# БАШҠОРТ ТЕЛЕНЕҢ ҺҮҘЛЕГЕ

РОССИЯ ФӘНДӘР АКАДЕМИЯҺЫ
УРАЛ БҮЛЕГЕ
БАШКОРТОСТАН ҒИЛМИ ҮҘӘГЕ
ТАРИХ, ТЕЛ ҺӘМ ӘҘӘБИӘТ ИНСТИТУТЫ

# БАШҠОРТ ТЕЛЕНЕҢ ҺҮҘЛЕГЕ

ИКЕ ТОМДА

I

А–М

МӘСКӘҮ
«РУССКИЙ ЯЗЫК»
1993

ББК 81.2—4
Б 48

Авторҙар: Агишев И. М., Биишев Ә. Ғ., Зәйнуллина Г. Д., Ишмөхәмәтов З. Ҡ., Кусимова Т. Х., Ураҡсин З. Ғ., Яруллина У. М.

Редколлегия: Биишев Ә. Ғ., Бикбулатов И. В., Ишбулатов Н. Х., Ишмөхәмәтов З. Ҡ., Сәйетбатталов Ғ. Ғ., Ураҡсин З. Ғ., Хөсәйенов Ғ. Б., Юлдашев Ә. Ә., Яруллина У. М.

Томдың редакторҙары: Биишев Ә. Ғ., Ишмөхәмәтов З. Ҡ., Ураҡсин З. Ғ., Яруллина У. М.

Рецензенттар: филология фәндәре кандидаты Әпсәләмов З. З., филология фәндәре докторы Ғарипов Т. М.

Авторы: Агишев И. М., Биишев А. Г., Зайнуллина Г. Д., Ишмухаметов З. К., Кусимова Т. Х., Ураксин З. Г., Яруллина У. М.

Редколлегия: Биишев А. Г., Бикбулатов Н. В., Ишбулатов Н. Х., Ишмухаметов З. К., Саитбатталов Г. Г., Ураксин З. Г., Хусаинов Г. Б., Юлдашев А. А., Яруллина У. М.

Редакторы тома: Биишев А. Г., Ишмухаметов З. К., Ураксин З. Г., Яруллина У. М.

Рецензенты: кандидат филологических наук Абсалямов З. З., доктор филологических наук Гарипов Т. М.

**Башҡорт** теленең һүҙлеге: Ике томда/Россия
Б 48 Фәндәр Академияһы. Башҡортостан ғилми үҙәге. тар., тел һәм әҙ. институты.— М.: Рус. яз., 1993.
ISBN 5-200-01089-6 (том I)
ISBN 5-200-01108-6

Һүҙлеккә 55 000 һүҙ һәм фразеологик берәмек һәм шулай уҡ фән, техника һәм сәнғәткә һ. б. ҡараған махсус терминдар, диалекталь һәм иҫкергән һүҙҙәр алынды, уларҙың һәр береһенә аңлатма бирелде, тейешле билдәләр ҡуйылды, әҙәбиәттән, халыҡ ижадынан, хәҙерге матбуғаттан миҫалдар килтерелде.

Һүҙлек башҡортса аңлаған бөтә кешеләргә, төрки телдәре буйынса белгестәргә тәғәйенләнә.

Б $\frac{4602030000 - 030}{015(01) - 93}$ Без объявл. ББК 81.2—4

ISBN 5-200-01089-6 (том I)
ISBN 5-200-01108-6

© Издательство «Русский язык», 1993

# БАШ ҺҮҘ

Башҡорт теленең аңлатмалы һүҙлеге тәүләп донъяға сыға. Уның ғәмәлгә килеүе республикабыҙҙың культура тормошонда ҙур ваҡиға булып тора, халыҡтың дөйөм белем кимәленең күтәрелеүен, ғөмүмән, фәндең һәм культураның үҫеүен күрһәтә. Был һүҙлекте әҙерләү Совет власы йылдарында башҡорт тел ғилеменең ҡаҙаныштары нәтижәһендә генә мөмкин булды.

Телдең һүҙ байлығын туплау, һүҙҙәрҙең мәғәнәләрен асыу тулылығы, эшкәртеү кимәле, алынған лексик һәм фразеологик материалдың норма йәһәтенән баһаланышы буйынса тәҡдим ителгән һүҙлек башҡорт лексикографияһының ике йөҙ йыллыҡ тарихында яңы баҫҡыс булып тора.

Башҡорт теленең тәүге һүҙлектәре XVIII быуаттың аҙаҡтарында төҙөлгән. Улар күләме буйынса ҙур түгел һәм башлыса ҡулъяҙма хәлендә ҡалған. Мәҫәлән, Ырымбур губерна канцелярияһында коллежский асессор булып хеҙмәт иткән Миндияр Биксурин тарафынан әҙерләнгән русса-башҡортса һүҙлек 360 һүҙҙән генә торған. Унда рус һәм ғәрәп графикаһы ҡулланылған.

Шул уҡ осорҙа һүҙлектәр әҙерләү менән Россия Фәндәр һәм художестволар академияһы шөғөлләнә башлай. Академия тарафынан ойошторолған экспедициялар Россияның төрлө халыҡтарының географияһы, этнографияһы һәм башҡа өлкәләре менән бергә телдәре буйынса ла мәғлүмәттәр йыя.

Академик И. Г. Георги тарафынан башҡорт теле буйынса йыйылған материал баҫылмай ҡалған. Аҙағыраҡ был материал (285 башҡорт һүҙе) академик П. С. Паллас төҙөгән телдәр һәм диалекттарҙың сағыштырма һүҙлектәренә (СПб., 1787—1789, 4 томда) индерелә.

Билдәһеҙ авторҙар тарафынан тупланған һүҙ исемлектәре лә бар, ҡулъяҙма хәлендә һаҡланған был исемлектәрҙә бер нисә йөҙ рус һүҙе төрлө телдәргә, шул иҫәптән башҡорт теленә лә, тәржемә ителгән.

Мир-Салих Биксуриидың дәреслегенә (I-се сығарылышы Ырымбур, 1859; 2-се сығарылышы Ҡазан, 1869), Л. З. Будаговтың Төрөк-татар телдәренең сағыштырма һүҙлегенә (СПб., 1869. I т.; 1871. II т.) һәм В. В. Радловтың Төрки телдәр һүҙлеге тәжрибәһенә (СПб., 1888—1911. I—IV томдар) байтаҡ башҡорт һүҙҙәре махсус билдәләр менән индерелгән.

XIX быуаттың аҙағында башҡорт теле менән ҡыҙыҡһыныу көсәйә. Рус графикаһында баҫылған башҡорт теле дәреслектәре менән бер рәттән ҙур булмаған тәржемә һүҙлектәр донъя күрә: төрки телдәр белгесе, рус миссионеры В. В. Катаринский мәктәп уҡытыусыһы Мөхәмәтғәлим Ҡыуатов ярҙамында Русса-башҡортса (Ырымбур, 1893) һәм Башҡортса-русса (Ырымбур, 1899) ҡыҫҡаса һүҙлектәр баҫтыра. Күләме буйынса артыҡ ҙур булмаған был һүҙлектәрҙең (тәүгеһенә 2500, икенсеһенә 1000 баш һүҙ алынған) үҙ ваҡытында башҡорт һәм рус телдәрен өйрәнеүҙә ҙур практик әһәмиәте була.

Венгр ғалимы В. Прөлененң XX быуат башында башҡорт теле дәреслегенә ҡушымта рәүешендә баҫылып сыҡҡан Башҡорт-венгр һүҙлеге мөһим сығанаҡ булып тора.

Бөйөк Октябрь социалистик революцияһына тиклем ғәрәп графикаһына нигеҙләнгән төрки теле башҡорт яҙма әҙәби теле итеп ҡулланылды һәм был яҙма, бер аҙ үҙгәртелеп, 1928 йылға тиклем файҙаланылды. Бынан һуң яҙма латин графикаһына күсерелде, ә 1939 йылда рус графикаһы нигеҙендә төҙөлгән алфавит ҡабул ителде.

Башҡорт теленең һүҙ байлығын йыйыу һәм һүҙлектәр төҙөү эше 20-се йылдарҙа планлы рәүештә башлана. Матбуғатта Ғ. Вильдановтың халыҡ теленән йыйған һүҙҙәр исемлеге аңлатмалары менән баҫыла, Н. Таһировтың ҡыҫҡаса аңлатмалы һүҙлеге донъя күрә (Башҡорт лөғәте. Өфө, 1926).

30-сы йылдарҙа яҙыусы Төхвәт Морат башҡорт теленең аңлатмалы һүҙлеген төҙөү эше менән шөғөлләнә. Ләкин, ҡыҙғаныуға ҡаршы, ул йыйған һүҙҙәр, аңлатмалар, авторҙың Бөйөк Ватан һуғышына алыныуы сәбәпле, тамамланмай ҡала һәм баҫылып сыҡмай. Уның ҡулъяҙмаһы һаҡлана, материалдары ошо һүҙлекте төҙөүҙә файҙаланылды.

Башҡорт лексикографияһында М. А. Ҡулаевтың ижади эшмәкәрлеге айырым урын алып тора. Һөнәре буйынса врач, мәғрифәтсе ғүмере буйы тел ғилеме менән шөғөлләнә һәм бик үҙенсәлекле башҡортса-русса һүҙлек төҙөй. Ҡулъяҙ-

ма килеш ҡалған был һүҙлектең материалы ла аңлатмалы һүҙлеккә алынды.

Башҡорт әҙәби телен халыҡтың һөйләү теле нигеҙенә күсереү уны нормалаштырыу буйынса артабан эш алып барыуҙы талап итте.

30-сы йылдарҙың аҙағында ҙур күләмле тәржемә һүҙлектәр төҙөү башлана. Ошо типтағы лексикографик ҡулланмаларҙың тәүгеһе булып русса-башҡортса һүҙлек профессор Н. К. Дмитриев редакцияһында ике баҫмала сыҡты (Өфө, 1942; Мәскәү, 1954). Улар мәктәптәр өсөн тәғәйенләнһә лә, ғәмәлдә киң ҡулланыш тапты, йөкмәткеһе менән дә, эшләнеш кимәле буйынса ла артабанғы һүҙлектәр өсөн өлгө булды.

Беренсе ҙур күләмле русса-башҡортса һүҙлек БАССР Министрҙар Советы эргәһендәге Тел, әҙәбиәт һәм тарих институты хеҙмәткәрҙәре тарафынан әҙерләнде һәм 1948 йылда Н. К. Дмитриев, Ҡ. З. Әхмәров, Т. Ғ. Баишев редакцияһында донъя күрҙе. Уида 40 мең рус һүҙе башҡортсаға тәржемә итеп бирелә.

1958 йылда Сит һәм милли телдәр һүҙлектәре нәшриәтендә Башҡортса-русса һүҙлек баҫылып сыҡты. Уға 22 мең башҡорт һүҙе инде. Күләме буйынса ла, һүҙлек статьяларының эшләнеше буйынса ла был һүҙлек ошоғаса башҡорт теле лексикаһының берҙән-бер тулы тупланмаһы булып тора.

1964 йылда «Советская Энциклопедия» нәшриәтендә яңы Русса-башҡортса һүҙлек донъя күрҙе, быныһында 46 мең баш һүҙ алынған.

Һуңғы егерме йылда ике телле тәржемә һәм терминологик һүҙлектәр менән бер рәттән һүҙҙәрҙең айырым лексик-семантик төркөмдәре буйынса лексикографик ҡулланмалар әҙерләнде һәм баҫтырып сығарылды: синонимдар, антонимдар, омонимдар, фразеологик берәмектәр һүҙлектәре, кеше исемдәре, Башҡорт АССР-ының ер-һыу атамалары буйынса белешмәләр.

Башҡорт лексикографияһының үҫеше, фәндең, техниканың, культураның һәм сәнғәттең ҡаҙаныштары башҡорт теленең Аңлатмалы һүҙлеген эшләүгә тотонорға мөмкинлек асты. Һүҙлекте төҙөүгә әҙерлек эшенә Тарих, тел һәм әҙәбиәт институтының бер төркөм телселәре 60-сы йылдарҙың башында уҡ тотондо. XIX быуат аҙағынан һуңғы ваҡытҡа тиклем сыҡҡан бөтә әҙәби, ғилми, ижтимағи-политик баҫмаларҙан, совет дәүерендә баҫылған матбуғаттан, халыҡ ижады ҡомартҡыларынан, архив ҡулъяҙмаларынан, баҫма һәм ҡулъяҙма һүҙлектәрҙән лексик материал туплап, картотека төҙөлдө.

Картотекаға башҡорт һөйләштәре һүҙлегенең материалдары ла алынды (Өфө, 1967, I т.; Өфө, 1970, 2 т.), унда шулай уҡ яҙыусылар Һ. Дәүләтшина, М. Тажи, С. Кулибайҙың һәм халыҡ сәсәне М. Буранғолдоң архивтарынан, фән һәм культура эшмәкәрҙәре Ғ. Б. Хөсәйеновтың, Ғ. И. Ишбулатовтың һәм башҡаларҙың тапшырған материалдарынан йыйылған һүҙҙәр индерелде. Тупланған картотека фонды ошо һүҙлекте ғәмәлләштереү өсөн төп нигеҙ булды.

Һүҙлекте төҙөүҙә рус лексикографияһының бай тәжрибәһе файҙаланылды. Рус теле аша үҙләштерелгән ижтимағи-политик һәм ғилми-техник терминдарҙың аңлатмалары Евгеньева А. П. редакцияһында сыҡҡан Рус теленең 4 томлыҡ һүҙлеге буйынса эшләнде. Ҡайһы бер грамматик һәм лексик характерҙағы мәсьәләләрҙе хәл итеүҙә татар һәм үзбәк телдәренең аңлатмалы һүҙлектәре ҙур ярҙам итте.

Башҡорт теле һүҙлегенең нигеҙенә нормативлыҡ принцибы һалынған. Унда һүҙҙең һәр бер мәғәнәһе, мәғәнә төҫмөрө айырым аңлатыла, ҡулланылыш үҙенсәлектәре билдәләнә. Шуның менән телдең һүҙ байлығы, уның мәғәнәләр системаһы, грамматик һәм стилистик мөмкинлектәре асыла. Һүҙҙең мәғәнәләренә һүҙбәйләнештәр, матур әҙәбиәттән, халыҡ ижады әҫәрҙәренән һәм ваҡытлы матбуғаттан алынған миҫалдар бирелә.

Алынған цитаталарҙың тәңгәл килеүе, грамматик билдәләмәләрҙең, лексик категорияларҙың һәм этимологик белешмәләрҙең дөрөҫлөгө өсөн һүҙлекте төҙөүселәр яуаплы.

Ҡайһы бер милләтте йәки халыҡты билдәләгән һүҙҙәргә аңлатма уларҙың 1990 йылдағы торошо буйынса бирелә.

Һүҙлек өҫтөндә **Россия** Фәндәр Академияһы Урал бүлеге Башҡортостан ғилми үҙәге Тарих, тел һәм әҙәбиәт институтының хеҙмәткәрҙәре эшләне. Авторҙар коллективы менән Ә. Ғ. Биишев етәкселек итте. Һүҙлектең ҡулъяҙмаһын да тәүләп ул редакторлап сыҡты. Һүҙлекте төҙөүселәр: И. М. Агишев — З, Л, Ө, Р, С, Ә хәрефтәрен; Ә. Ғ. Биишев — Й, Ҡ (**ҡаптырыу** һүҙенән **ҡарын** һүҙенә тиклем) хәрефтәрен; Г. Д. Зәйнуллина — Ҡ (**ҡомаҡ** һүҙенән **ҡыйлыҡ** һүҙенә тиклем), М, Ф, Х, Ш (**шеш** һүҙенән аҙаҡҡаса) хәрефтәрен; З. Ҡ. Ишмөхәмәтов — Б, П, Т (**тауыҡ** һүҙенән **төркенсәк** һүҙенә тиклем), У, Ф хәрефтәре; Т. Х. Кусимова — Г, Ғ, Д, Е, Ҙ, Ж, И, Ҡ (**ҡарынғау** һүҙенән **ҡомаҡ** һүҙенә тиклем), Һ, Я (**ялтырауыҡ** һүҙенән аҙаҡҡаса) хәрефтәре; Т. Ф. Ҡарамышева — Ҡ (баштан алып **ҡаптырыу** һүҙенә тиклем), Ү, Һ, Ч, Ш хәрефтәре; З. Ғ. Ураҡсин — А хәрефе; М. Х. Әхтәмов — В, Н, О хәрефтәре; У. М. Яруллина — К, **Т** (баштан алып **тауыҡ** һүҙенә, **түрә** һүҙенән аҙаҡҡаса), **Ы**, Э, Я (баштан алып **ялтырау** һүҙенә тиклем) хәрефтәре.

Һүҙлектең айырым өлөштәре **Россия** Фәндәр Академияһының Әҙәбиәт һәм тел бүлеге эргәһендәге лексикология һәм лексикография буйынса Ғилми Советта ике тапҡыр тикшерелде, Тарих, тел һәм әҙәбиәт институтының ғилми советының киңәйтелгән ултырыштарында ҡаралды; нәшриәттә редакторлау ваҡытында юғары уҡыу йорттары уҡытыусылары профессор Т. М. Ғарипов һәм фән кандидаттары З. З. Әбсәләмов менән Р. Ф. Зарипов, ҡулъяҙманы өлөшләтә уҡып, рецензиялар яҙҙылар.

Картотеканы булдырыуҙа башынан аҙағынаса ҙур яуаплылыҡ менән Ы. Ш. Ҡобағошова эшләне. Һүҙлектең редакторланған материалын баҫмаға әҙерләү эшен ул Н. Ф. Суфьянова менән бергә тулыһынса башҡарып сыҡты. Картотеканы төҙөүҙә һәм һүҙлек ҡулъяҙмаһының тәүге вариантын техник яҡтан эшкәртеүҙә Ғ. Ғ. Гәрәйева, М. С. Күзбәкова, В. Ж. Төхвәтуллина һәм З. Ғ. Уразбаева ҡатнашты.

Һүҙлектең ҡулъяҙмаһын артабан эшкәртеүҙе редколлегия ағзалары З. Ҡ. Ишмөхәмәтов, З. Ғ. Ураҡсин һәм У. М. Яруллина нәшриәт редакторҙары менән берлектә башҡарҙылар. Т. Х. Кусимова бер нисә хәрефте нәшриәттә эшкәртеүҙә һәм баҫмаға әҙерләүҙә ҡатнашты.

Институт һүҙлекте төҙөүҙә, тикшереүҙә ҡатнашып, үҙҙәренең тәҡдимдәре, иҫкәрмәләре менән уның сифатын яҡшыртыуға, байытыуға булышлыҡ иткән бөтә иптәштәргә рәхмәт белдерә.

Башҡорт теленең аңлатмалы һүҙлеге буйынса бөтә булған тәҡдимдәрегеҙҙе, теләктәрегеҙҙе түбәндәге адрес буйынса ебәреүегеҙҙе үтенәбеҙ: 450054, Өфө ҡалаһы, Октябрь проспекты, 71, Тарих, тел һәм әҙәбиәт институты йәки 103012 Мәскәү, Старопанский тыҡрығы, 1/5, «Русский язык» нәшриәте.

Россия Фәндәр Академияһы Урал бүлеге Башҡортостан ғилми үҙәге
Тарих, тел һәм әҙәбиәт институты

# ФАЙҘАЛАНЫЛҒАН ҺҮҘЛЕКТӘР ИСЕМЛЕГЕ


### Башҡортса-русса һәм русса-башҡортса һүҙлектәр

Башкирско-русский словарь. М., 1958.
Каримова Г. Р. Русса-башҡортса һүҙлек. Өфө, 1942.
Каримова Г. Р. Русско-башкирский словарь. М., 1954.
Катаринский В. В. Башкирско-русский словарь. Оренбург, 1899.
Катаринский В. В. Краткий русско-башкирский словарь. Оренбург, 1893.
Русско-башкирский словарь. М., 1948.
Русско-башкирский словарь. М., 1964.
Ураҡсин З. Ғ., Надршина Ф. А., Йосопов Х. Ғ. Башҡортса-русса фразеологик һүҙлек. Өфө, 1973.

### Аңлатмалы һүҙлектәр

Таһиров Н. А. Башҡорт лөғәте. Өфө, 1926. I киҫ.
Ураҡсин З. Ғ. Башҡорт теленең синонимдар һүҙлеге. Өфө, 1985.
Әхтәмов М. Х. Башҡорт теленең омонимдар һүҙлеге. Өфө, 1966.
Әхтәмов М. Х. Башҡорт теленең антонимдар һүҙлеге. Өфө, 1986.

### Диалектологик һүҙлектәр

Башҡорт һөйләштәренең һүҙлеге. Өфө.
Т. 1: Көнсығыш диалект. 1967.
Т. 2: Көньяҡ диалект. 1970.
Т. 3: Көнбайыш диалект. 1987.

### Орфографик һүҙлектәр

Дәүләтшин Ғ. Башҡорт теленең имлә һүҙлеге. Өфө, 1930.
Әхмәр Ҡ. Башҡорт әҙәби теленең орфография һүҙлеге. М., 1952.

### Терминологик һүҙлектәр

Ахтямов М. Х., Ахтямова М. С. Словарь математических терминов. Уфа, 1982.
Баишев Т. Ғ. Зоология терминдары һүҙлеге. Өфө, 1952.
Вильданов Г. Термины по делопроизводству. Уфа, 1927.
Ғүмәров В. З. Кешенең анатомияһы һәм физиологияһы буйынса русса-башҡортса һүҙлек. Өфө, 1981.
Ғәдилов Л., Шиғаев М. Русса-башҡортса ҡыҫҡаса ауыл хужалығы һүҙлеге. Өфө, 1961.
Ишмөхәмәтов И. Х. Русса-башҡортса химия терминдары. Өфө, 1950.
Йәнтүрин С., Хисамов Ғ. Русса-башҡортса, башҡортса-русса ботаника терминдары һүҙлеге. Өфө, 1981.
Йәрмөхәмәтов Ә. И. Урман эше терминдары һүҙлеге. Өфө, 1954.
Кадерметов Х. Х. Русско-башкирский, башкирско-русский словарь терминов по физике. Уфа, 1984.
Мөхәмәтдинов М. М. Русса-башҡортса, башҡортса-русса юридик терминдар һүҙлеге. Өфө, 1956.
Мөхәмәтдинов М. М., Әбсәләмов З. З. Русса-башҡортса, башҡортса-русса юридик терминдар һүҙлеге. Өфө, 1980.
Мырҙаҡаев Ф. С. Русса-башҡортса ауыл хужалығы терминдары һүҙлеге. Өфө, 1987.
Сөләймәнов В. С. Русса-башҡортса һәм башҡортса-русса астрономия терминдары. Өфө, 1954.
Уразмәтов Н. Ботаника терминдары һүҙлеге. Өфө, 1952.
Хәкимов М. А. География терминдары һүҙлеге. Русса-башҡортса һәм башҡортса-русса. Өфө, 1952.
Чураев Ш. Русса-башҡортса физика терминдары. Өфө, 1949.
Шакиров З., Хөсни У. Тел терминдары. Өфө, 1935.
Әбсәләмов З. З. Русса-башҡортса һәм башҡортса-русса ижтимағи-политик терминдар һүҙлеге. Өфө, 1985.
Әхмәтйәнов К. Әҙәбиәт ғилеме һүҙлеге. Өфө, 1965.

### Башҡа телдәрҙең һүҙлектәре

Баранов Х. К. Арабско-русский словарь. М., 1957.
Большая Советская Энциклопедия. / 3-е изд. М., 1969—1978. Т. 1—30.

Будагов Л. З. Сравнительный словарь турецко-татарских наречий. В 2 т. СПб., 1869—1871. Т. 1—2.

Даль В. И. Толковый словарь живого великорусского языка. М., 1955. Т. 1—4.

Древнетюркский словарь. Л., 1969.

Егоров В. Г. Этимологический словарь чувашского языка. Чебоксары, 1964.

Миллер Б. В. Персидско-русский словарь. М., 1953.

Севортян Э. В. Этимологический словарь тюркских языков. М., ч. 1, 1974; ч. 2, 1978; ч. 3, 1980.

Словарь современного русского литературного языка / АН СССР. Ин-т рус. яз. М., Л., 1950—1965. Т. 1—17.

Словарь русского языка / АН СССР. Ин-т рус. яз. 2-е изд. испр. и доп. М., 1981—1984. Т. 1—4.

Татар теленең аңлатмалы сүзлеге. Казан, 1977—1981. Т. 1—3.

Түркмен дилинин сөзлиги. Ашгабат, 1962.

Ўзбек тилининг изоҳли луғати / Под ред. З. М. Магруфова. М., 1981. Т. 1—2.

Хәмзин К. З., Мәхмүтов М. И., Сәйфуллин Г. Ш. Гарәпчә-татарча-русча алынмалар сүзлеге. Казан, 1965.

Чувашско-русский словарь / Под ред. М. И. Скворцова.— М.: Рус. яз., 1982.

Юдахин К. К. Киргизско-русский словарь. М., 1965.

# ҺҮҘЛЕКТЕҢ ТӨҘӨЛӨШӨ ҺӘМ УНАН ФАЙҘАЛАНЫУ ТӘРТИБЕ

## ҺҮҘЛЕККӘ ҺҮҘҘӘР АЛЫУ

§ 1. Һүҙлектең нигеҙен хәҙерге башҡорт әҙәби теленең дөйөм ҡулланыштағы лексикаһы һәм фразеологияһы тәшкил итә. Уның материаль базаһы булып Институтта тупланған махсус картотека хеҙмәт итте.

§ 2. Һүҙлеккә халыҡтың тарихыиа, боронғо рухи тормошона, культураһына ҡараған, башҡа халыҡтар меиәи аралашыуын сағылдырған һәм фольклорҙа, Октябрь революцияһына тиклемге әҙәбиәттә, башҡа сығанаҡтарҙа осраған **араз, арзу, барымта, бәдеүәм, губерна, ғәйет, ғазраил, дарелфөнүн, дайса, далиға, лашман, пирәйәз** һ. б. кеүек иҫкергән һүҙҙәр ҙә алыиды.

§ 3. Был һүҙлек һүҙ ҡуллаиыуҙа норма билдәләү маҡсатын да башҡара. Нормативлыҡҡа ирешеү өсөн һүҙлеккә әҙәби телгә ҡараған һүҙҙәрҙән, мәғәнәләрҙән тыш айырым билдәләр менән түбәндәге һүҙ төрҙәре лә индерелде:

1) матур әҙәбиәттә, матбуғатта һирәкләп булһа ла осрай торған ябай һөйләү теле һүҙҙәре һәм диалекталь һүҙҙәр. Уларҙың әҙәби телдә синонимы булмағандары ла бар, бындайҙары әҙәби тел өсөн сығанаҡ булып та тора, мәҫ.: **асырт, аткүҙ, биҙел** һ. б. Диалекталь һүҙҙәрҙең ҡайһы бер варианттарының тел тарихы өсөн әһәмиәтле булғандары ла һүҙлектә урын алды;

2) әҙәбиәттә осраған лексик һәм орфографик варианттар; уларҙың төп вариантына башҡаларынан тоҫҡама яһалды:

**АРЗАНЛАНЫУ** *к. ҡар.* **арзанайыу.**
**БӨЙӨРЛӨК** *и. ҡар.* **бөйөрсә.**
**МӘҺАБӘТ** *с. ҡар.* **мөһабәт.**

§ 4. Һүҙлеккә бөтә һүҙ төркөмдәренә ҡараған һүҙҙәр индерелде. Шул иҫәптән:

1) мәктәп дәреслектәрендә, ғилми хеҙмәттәрҙә, матбуғатта осрай торған һәм тарихта һаҡланып ҡалған төрлө ил халыҡтарының исемдәре (**абхаз, болғар, инд, кубин, малай, хазар, һинд** һ. б.); шулай уҡ һүҙҙәрҙең тәүге өлөштәре ҡушылмаһынан яһалған һүҙҙәр (**комсомол, райком, совхоз** һ. б.), тәүге хәрефтәрҙән яһалып, үҙаллы һүҙ булып киткән ҡайһы бер исемдәр (**вуз**);

2) сифаттарҙың төп дәрәжәнән тыш, аҙһытыу дәрәжәһе формалары (**ал, алһыу; йәшел, йәшкелт** һ. б.);

3) ябай һандарҙы һәм тиҫтәләрҙе белдергән төп һандарҙан тыш, уларҙан яһалған бүлем, йыйнау, рәт, сама һандары (**өс, өсәр, өсәү, өсөнсө, өсләп; илленсе, меңәрләп** һ. б.);

4) ҡылымдарҙың төп йүнәлештән тыш, башҡа йүнәлеш формалары (**йыуыу, йыуҙырыу, йыуыныу, йыуылыу, йыуышыу** һ. б.);

5) лексик берәмек булып киткән исем һәм сифат ҡылымдар (**ауырыу, буяу, буяусы, иҙеүсе** һ. б.), сифат ҡылым (**ағар, аҡҡан-тамған, алаҫаҡ; бешмәгән, бирәсәк, булмаған, ебегән** һ. б.), хәл ҡылымдар (**ауа-түнә, ҡаса-боҫа** һ. б.); шулай уҡ формаль мәғәнәләрен юғалтып, башҡа һүҙ төркөмдәренә күскән хәл ҡылым формалы һүҙҙәр (**алып, башлап, тороп** һ. б.).

§ 5. Һүҙ яһаусы тоторҡло ялғауҙар ярҙамында яһалғандарҙан тыш, һүҙлеккә түбәндәгеләр баш һүҙ итеп алынды:

1) регуляр ялғауҙар ярҙамында яһалып, үҙенә башҡа лексик берәмек булып нығынған һүҙҙәр (**аңлы, ауылдаш, белгес, белдекле, билдәһеҙ, елгәргес, бригадирлыҡ, бәйләнеш, ҡағылышлы, класташ, оялсан, төймәләк, украинса, утынлыҡ** һ. б.);

2) ҡулланылышы сикләнгән, һанаулы ғына һүҙҙәргә ҡушыла торған ялғауҙар ярҙамында яһалған һүҙҙәр (**аҡсалата, аңғармаҫтан, батырсылыҡ, күпселек, ҡоролай, ҡошсоҡ, оҙонса, төрткөләү**) һ. б.

§ 6. Һүҙ үҙгәртеүсе ялғауҙар менән килеп, үҙенә башҡа лексик берәмек булып формалашҡан һүҙҙәр баш һүҙ итеп алынды (килеш формалары: **алға, бергә, беренсенән, бушҡа, ғүмергә, көскә, икенсенән, ҡабаттан, тиҙҙән** һ. б.; эйәлек формалары: **барлығы, барыһы, бөтәһе, күбеһе, ҡайһыныһы, ҡыҫҡаһы** һ. б.; зат формалары: **баҡһаң, күрәһең, әйтерһең, әйтәйек** һ. б.).

§ 7. Ҡушма һәм ҡушар һүҙҙәрҙең ҡушып йәки һыҙыҡ аша яҙыла торғандары ғына баш һүҙ итеп бирелде (**ағай-еңгә, алъяпҡыс, балғалаҡ, берәм-һәрәм**); шулай уҡ бер формалағы һүҙҙәрҙе ҡабатлау юлы менән яһалған һүҙҙәр, йәки икәү-ара грамматик бәйләнешкә инеп, бер лексик төшөнсә аңлатҡан берәмектәр баш һүҙ итеп алынды (**айырым-асыҡ, асыҡтан-асыҡ, берәм-берәм, көндән-көн** һ. б.). Өндәрҙең ҡыҫҡарыуы арҡаһында ике һүҙҙән ҡушылып яһалған берәмектәр ҙә баш һүҙ итеп алынды (**апарыу, апҡасыу, аруҡ, былайтыу, ҡалайтыу, улайтыу** һ. б.).

§ 8. Киҫәксәләрҙең төп сифаттарға, рәүештәргә артыҡлыҡ дәрәжәһе биргән ҡабатланыусы тәүге өлөштәре айырым баш һүҙ итеп алынды (**ап≠, ҡап≠, ҡып≠, шып≠** һ. б.).

## ҺҮҘЛЕКТЕҢ ТӨҘӨЛӨШӨ

§ 9. Һүҙлеккә баш һүҙ булып ингән бөтә һүҙҙәр алфавит тәртибендә бирелде.

§ 10. Һүҙ бер генә мәғәнәле булғанда, уның

эквиваленты булып йөрөгән ҡушма һүҙҙәр, һүҙбәйләнештәр төп варианттың грамматик билдәһенән һуң өтөр аша бирелде, мәҫәлән:

**ТИРМӘ** *и.*, **тирмә өй...**

Әгәр һүҙ ике йәки бер нисә мәғәнәле булһа, билдәле бер мәғәнәнең эквиваленты булып йөрөгән һүҙбәйләнештәр шул мәғәнә эргәһенә түңәрәк йәйә эсендә *йәки* теркәүесе менән бирелде, мәҫәлән:

**АРАУЫҠ** *и.* **1.** ...

**3.** (*йәки* **ваҡыт арауығы**)...

**ТИШЕҮ** *к.* **1.** ...

**2.** (*йәки* **ҡолаҡҡа тишеү**) *күсм.* ...

**ТОҘ** *и.* **1.** (*йәки* **аш тоҙо**)...

§ 11. Күплек формаһында тоҡом, ғаиләгә ҡарағанлыҡты аңлата торған һүҙҙәрҙең варианты баш һүҙҙең йәки тейешле мәғәнәнең эргәһендә өтөр аша бирелде, мәҫәлән:

**БЕСӘЙ** *и.* **1.** ...

**2. бесәйҙәр, бесәй һымаҡтар** *зоол.* ...

§ 12. Ҡушарлап йөрөгән оҡшатыу һүҙҙәренең һәм ымлыҡтарҙың ҡыҫҡа аша бәйләнгән варианты баш һүҙ эргәһендә өтөр аша бирелде, мәҫәлән:

**АЙ-БАЙ, ай-бай-бай** *ымл.* ...

**ШАҠ-ШОҠ, шаҡ та шоҡ** *окш.* ...

§ 13. Бер нисә фонетик варианты булған киҫәксәләрҙең, теркәүестәрҙең төп һүҙе эргәһенә түңәрәк йәйә эсендә башҡа булған варианттары теҙеп бирелде; шулар эсенән ҡулланышта ҡалынлыҡ-нәҙеклек менән генә айырылғандары алфавит буйынса үҙ урынында ла күрһәтелеп, иң яҡын варианты иҫәпләнгән формаға тоҫҡалды, мәҫәлән:

**ҠЫНА** [3] **(кенә, ғына, генә)** *киҫ.* ...

**КЕНӘ** *киҫ. ҡар.* **ҡына** [3]

**ҒЫНА** *киҫ. ҡар.* **ҡына** [3].

**ГЕНӘ** *киҫ. ҡар.* **ҡына** [3].

§ 14. Омонимдар ғәрәп цифрҙары менән билдәләнеп, һәр ҡайныһы баш һүҙ итеп алынды, мәҫәлән:

**АЛА** [1] *с.* Аҡ менән ҡара йәки башҡа төҫ аралаш...

**АЛА** [2] *бәйл.* Сығанаҡ килештәге һүҙҙәр менән килеп, «тәңгәл», «тотош» тигән мәғәнәне бирә...

**АТ** [1] *и.* **1.** Йомро тояҡлы, ялбыр ҡыл ҡойроҡло, ялы эре йорт хайуаны. ...

**АТ** [2] *и.* **1.** Кешегә ҡушылған исем...

**КӨТӨҮ** [1] *к.* **1.** Килерен, булырын белеп, урында ҡалыу...

**КӨТӨҮ** [2] *к.* **1.** Күмәк малды утлауҙа әйләп, ҡарап йөрөтөү...

**КӨТӨҮ** [3] *и.* **1.** Утлауҙа ҡараулы йөрөгән бер төркөм мал. ...

Бынан тыш, исемдәрҙең сифатлашыуы йәки сифаттарҙың исемләшеүенән барлыҡҡа килгән ҡайһы бер омонимдарҙа баш һүҙ формаһы тәүгеһендә генә алынып, омонимлыҡ рим цифрҙары менән күрһәтелде, мәҫәлән:

**ТАШҠЫН** I *и.* **1.** ...

II *с.* **1.** ...

**ТЕҘМӘ** I *и.* **1.** ...

II *с.* **1.** ...

Бындай типтағылар тағы башҡа һүҙҙәр менән омонимдар теҙмәһен барлыҡҡа килтергән осраҡта баш һүҙ итеп бирелгән формаға өҫтәмә рәүештә ғәрәп цифры ҡуйылды, ә теҙмәләге артабанғы баш һүҙ ғәрәп цифры менән генә билдәләнде, мәҫәлән:

**БАЙ** [1] I *с.* **1.** ...

II *и.* **1.** ...

**БАЙ** [2] *и.* ...

Фразеологик бәйләнештәр, мәҡәл, әйтемдәр бындай осраҡтарҙа рим цифрлы омоним тибынан һуң бирелде, мәҫәлән:

**ЙЫЛЫ** [1] I *с.* **1.** ...

II *и.* **1.** ...

◆ **Йылы ҡулдан... Эскә йылы инеү...**

● *Йылы һүҙ йән аҙығы.* Әйтем.

§ 15. Омографтар баҫымлы ижеген күрһәтеү менән генә билдәләнеп, һәр ҡайныһы айырым бирелде, мәҫәлән:

**ПОЛИ́ТИК** *и.* Политика менән шөғөлләнгән кеше.

**ПОЛИТИ́К** *с.* **1.** Политикаға бәйле...

**ЯҢЫ́** *с.* **1.** Әле эшләнеп, бер ҙә тотонолмаған йәки әҙ тотонолған. ...

**Я́ҢЫ** *р.* **1.** Әле генә, күптән түгел...

§ 16. Һыҙыҡса аша яҙып йөрөтөлгән ҡушма һүҙҙәр, яһауҙа продуктив һаналған формалар айырым алып аңлатылды, мәҫәлән:

**-АРА** [3] **1.** Күмәк нәмәнең бәйләнешен белдереп, ҡушма сифат яһай: *район-ара бәйләнеш.*

§ 17. Үҙаллы ҡулланылмай, билдәле һүҙҙәр менән генә йөрөгән һүҙ берәмегә төп һүҙҙән һуң ике нөктә аша бирелде, мәҫәлән:

**АҘАҒЫ-БАШЫ: аҙағы-башы шул** бар булғаны шул, бөтәһе шул...

**ЗЫҠ: зыҡ ҡубыу** 1) шау-шыу, ығы-зығы килеү, сырсыулашыу... **Зыҡ ҡуптарыу**

1) шаулатыу, ығы-зығы килтереү...

**ЙӨРӨМӘЛЕ: үҙе йөрөмәле** үҙ көсө менән йөрөй торған...

## ҺҮҘЛЕК СТАТЬЯҺЫНЫҢ ТӨҘӨЛӨШӨ

§ 18. Һүҙлек статьяһында һүҙ тураһында төрлө мәғлүмәт бирелә.

Баш һүҙ яңы юлдан ярым ҡалын баш хәрефтәр менән баҫыла. Омографтарҙың һәм рус теленән, уның аша үҙгәрешһеҙ ингән һүҙҙәрҙең баҫымы күрһәтелә. Баш һүҙҙән һуң квадрат йәйә эсендә сит телдән ингән һүҙҙәргә этимологик белешмә бирелә. Артабан тейешле билдәләр менән (*бәйл., и., киҫ., биол., һөйл.* һ. б.) грамматик һәм стилистик баһа бирелә.

Һүҙлек статьяһының төп эстәлеген һүҙҙең мәғәнәләрен аңлатыу һәм һәр мәғәнәне иллюстрациялаған миҫалдар тәшкил итә. Аңлатманан һуң һүҙбәйләнештәр бирелде. Уидай һүҙбәйләнештәр менән сығанаҡлы миҫалдар араһына дүрткел ҡара билдә (■) ҡуйылды, мәҫәлән:

**ТОРМОШ** *и.* **1.** Донъяла йәки билдәле бер ерҙә йәшәү дәүере; ғүмер. *Тормош юлы.* ■ *Беҙҙең тормош алда әле, үҫтерербеҙ роза гөлдәрен.* Ғ. Сәләм.

Миҫалдарҙан һуң фразеологияға ҡарамаған һүҙбәйләнештәр тейешле мәғәнә эсендә, аҫтына бер һыҙыҡ һыҙып, аңлатып бирелде, мәҫәлән:

**ТЁХНИК** [*рус.* < *фр.*] *и.* Техника буйынса урта белем алып, шул өлкәлә эшләгән кеше. *Сәйҙел һала завод нигеҙен, техник булып корпус төҙөшә.* Ғ. Сәләм.

**Теш техникы** теш протезы яһау оҫтаһы.

Һүҙ күп мәғәнәле булғанда, һәр мәғәнәһе ғәрәп цифрҙары менән билдәләнеп, юл башынан бирелә, мәғәнә төҫмөрҙәре, исемдәрҙең иркәләү, ҡылымдарҙың эйәһеҙ һ. б. ҡулланыу осраҡтары бер тура һыҙыҡ (/) аша күрһәтелә. Ә бер төркөмдәге һүҙҙең башҡа һүҙ төркөмө вазифаһында ҡулланылыуы ике параллель һыҙыҡтан (//) һуң бирелә, мәҫәлән:

**АЯУҺЫҘ** *с.* **1.** Ҡыҙғана белмәгән, ҡаты бәғерле. *Аяуһыҙ кеше.*/Йәлләүһеҙ, ҡаты. *Аяуһыҙ көрәш. Аяуһыҙ һуғыш.* // *Аяуһыҙ тотоноу. Аяуһыҙ һуғышыу.*

Һүҙҙең мәғәнәләре тураһындағы мәғлүмәт бөткәс, ярҙамлыҡ ҡылымдар менән килгән һүҙ бәйләнештәре юл башынан квадраттан (□) һуң бирелә һәм тағы яңы юл башынан ромб (♦) тамғаһы менән шул һүҙгә бәйле фразеология килтерелә.

Мәҡәләнең иң һуңында юл башынан ҡара түңәрәк тамға (●) менән мәҡәл, әйтемдәр күрһәтелә, мәҫәлән:

**БАЙРАМ** *и.* **1.** Йәмғиәт әһәмиәтендәге бер ваҡиғаға бағышланған тантана көнө. *Еңеү байрамы. Май байрамы. Октябрь байрамы.* ■ *Һәр ауылдың да була киң ат сабыш майҙандары. Йәшәһен беҙҙең халыҡтың милли был байрамдары!* Ш. Бабич./Дини яҡтан билдәләнгән махсус көн. *Ҡорбан байрамы. Ураҙа байрамы.* ...

□ **Байрам итеү** иҫтәлекле ваҡиғаға бағышлап тантана яһау. ...

♦ *Бары менән байрам* булғаны менән ҡәнәғәт икәнде белдергәндә әйтелә. ...

● *Ялҡауға көн дә байрам. Әйтем.*

## Этимологик мәғлүмәттәр

§ 19. Сит телдәрҙән ингән һүҙҙәргә баш һүҙҙән һуң квадрат йәйә эсендә уларҙың сығанаҡ теле күрһәтелде. Рус теленән һәм уның аша башҡа телдәрҙән русса яҙылышында үҙләштерелгән һүҙҙәргә башта *рус.* тигән билдә ҡуйылып, һуңынан тәүге сығанағы бирелде, мәҫәлән:

**А́ЗИМУТ** [*рус.*<*фр.*<*ғәр.*] *и.* ...
**БАГА́Ж** [*рус.*<*фр.*] *и.* ...
**БАЛЁТ** [*рус.*<*ит.*] *и.* ...

§ 20. Башҡорт теленә рус теленән һәм уның аша башҡа телдәрҙән үҙләштереп, фонетик үҙгәрештәр кисергән һүҙҙәргә этимологик белешмә менән бергә русса яҙылышы ла бирелде, мәҫәлән:

**АДМИНИСТРАТИВ** [*рус.* административный] *с.* ...
**БӨРЛӘНТИН** [*рус.* бриллиантин<*фр.*] *и.* ...
**ӨРФӨЙӘ** [*рус.* рупия<*санскр.*] *и.* ...

§ 21. Башҡорт телендә бер һүҙгә әйләнгән төрлө сығанаҡлы һүҙҙәрҙең этимологияһын теҙеп биргәндә плюс (+) тамғаһы ҡулланылды, мәҫәлән:

**КИТАПХАНА** [*ғәр.* + *фарс.*] *и.* ...
**ЙОНДОҘНАМА** [*төрк.* + *фарс.*] *и.* ...

§ 22. Тамыры үҙаллы һүҙ рәүешендә үҙләштерелеп, артабан башҡорт ялғауҙары ярҙамында яһалған **агрономик, авторитетлы, бригадирлыҡ, нефтсе** кеүек яһалма һүҙҙәргә этимологик белешмә бирелмәне.

## Һүҙҙең мәғәнәләрен билдәләү

§ 23. Һүҙҙең мәғәнәһе уны мөмкин тиклем ҡыҫҡа һәм аныҡ аңлатыу юлы менән асып бирелде, мәҫәлән:

**АПАУ** *ымл.* Балаларҙы иркәләп йәлләгәндә әйтелә. ...

**БАЛДАҠ** *и.* **1.** Бармаҡҡа кейә торған дүңгәләк кеүек биҙәүес. ...
**2.** Ҡылыс, бысаҡ кеүек нәмәләрҙең алҡымына кейҙерелә торған ҡоршау. ...

§ 24. Һүҙлектә һүҙҙәрҙең хәҙерге башҡорт әҙәби телендә киң ҡулланылған мәғәнәләре бирелде.

§ 25. Аңлатыла торған һүҙҙең синонимдары булған осраҡтарҙа, улар аңлатма биреп бөткәндән һуң, нөктәле өтөр аша һүҙгә өҫтәмә характеристика рәүешендә килтерелде, мәҫәлән:

**АҘАП** *и.* **1.** Баштан кисерелгән ауырлыҡ; ыҙа, яфа. ...

**БАҒЫШЛАУ** *ҡ.* **1.** Берәй нәмәне кем йәки нимәлер исеменә төбәү; арнау. ...

§ 26. Мәғәнәне тасуири яҡтан билдәләү, аңлатып биреү ҡыйын булған айырым осраҡтарҙа уның мәғәнәһен аса алған синонимдар төркөмө ярҙамында бирелде, мәҫәлән:

**ВАТЫҠ** [1] *с.* **1.** Ватылған, ярыҡ. ...
**ЗАЯ** *с.* Әрәм, буш. ...
**ЗИФА** *с.* **1.** Ҡупшы, нәҙек, матур. ...

§ 27. Һөйләү телендә, диалекттарҙа, шулай уҡ айырым стилдәрҙә генә ҡулланылған һүҙҙәр әҙәби телдә йөрөгән һүҙҙәр ярҙамында билдәләнде, мәҫәлән:

**АПАРЫУ** *ҡ. ҡыҫҡ. ф. һөйл.* Алып барыу. ...
**БАҒ** *и. шигр.* Баҡса. ...

Ундайҙарҙың ҡайһы берҙәрен алыштырырҙай синонимдар булмаған осраҡта ул һүҙҙәр дөйөм ҡағиҙә буйынса билдәләнде, мәҫәлән:

**БАБАЛАЙ** *и. диал.* Кәзә тәкәһе.
**БАҘАҒЫЙ** *и. диал.* Һаҙ билсәне.

§ 28. Күсмә мәғәнә (йәки мәғәнә төҫмөрө) *күсм.* билдәһе менән баш һүҙҙең артынан уҡ башҡа билдәләрҙән алда ҡуйылды, мәҫәлән:

**АҒАРТЫУ** *ҡ.* **1.** ...
**6.** *күсм.* Таҙа, ғәйепһеҙ итеп күрһәтеү. ...
**АСҠЫС** *и.* **1.** ...
**3.** *күсм.* Ниҙелер сисеү, асыу, көйләү сараһы.

§ 29. Һүҙҙең әҙәби телдә бер нисә лексик йәки фонетик варианты йөрөһә, уларҙың киңерәк ҡулланылғаны аңлатып бирелде лә, башҡаһы уға тоҫҡалды, мәҫәлән:

**БАҘНАТ** *и.* ...
**БАҘНАТЛЫК** *и. ҡар.* **баҙнат.**
**ҒАЛӘМ** *и.* ...
**ҒӘЛӘМ** *и. ҡар.* **ғаләм.**

Ҡылымдарҙың төшөм, йөкмәтеү, ҡайтым, уртаҡлыҡ йүнәлеше формалары ла ошо рәүеш-

ле мәғәнәләре аңлатылған төп йүнәлешкә тоҫҡап бирелде, миҫалән:

**АҒАРТТЫРЫУ** *к. йөкм. ҡар.* **ағартыу** 1, 5.

**АҒАРТЫЛЫУ** *к. төш. ҡар.* **ағартыу** 1, 5.

**АҒАРТЫШЫУ** *к. урт. ярҙамл. ҡар.* **ағартыу** 1, 3, 4.

§ 30. Терминдарға, ҡорал-ҡорамалды белдергән һүҙҙәргә, шулай уҡ үҫемлек, хайуан, матдә һ. б. шундайҙарҙың атамаларына ҡыҫҡаса характеристика төшөнсәне асыҡлау йәки нәмәиең, матдәнең һ. б. үҙен тасуирлау юлы менән бирелде, миҫалән:

**БӘПЕМБӘ** *и.* **1.** Ҡатмарлы сәскәлеләр ғаиләһенә ҡараған ҡыуыш һабаҡлы, һары суҡ сәскәле, туҙғаҡ орлоҡло ваҡ үҫемлек. ...

§ 31. Һүҙҙең антонимы *киреһе* тигән билдә менән аңлатманан һуң өҫтәмә характеристика рәүешендә бирелде, миҫалән:

**АЛЫҪ** *с.* **1.** Оҙон ара менән айырылған; йыраҡ; *киреһе* яҡын. ...

§ 32. Һүҙҙең мәғәнәһе ниндәйҙер шарттар менән сикләнгән булһа, улар төрлө билдәләр ярҙамында һәм һүҙҙең аңлатмаһында бирелә торған асыҡлау юлы менән күрһәтелде, миҫалән:

**БӘКЕС** [1] *с.* **1.** Осо саманан артыҡ эскә тартып һаиланған (салғы йәки ураҡҡа ҡарата); *киреһе* һоноҡ. ...

**БҮТӘН** *с.* **1.** ...

**4.** *бәйл. функцияһында* Сығанаҡ килештәге һүҙҙәр менән килеп, «**башҡа**», «**тыш**» мәғәнәһеи бирә. ...

## Фразеология

§ 33. Баш һүҙҙең бөтә мәғәнәләренә лә аңлатма биреп, миҫалдар килтерелгәс, ромб (♦) тамғаһынан һуң яңы юлдан алфавит тәртибендә фразеологик берәмектәр (**бәкәлгә һуғыу, күҙ дүрт булыу, ҡарт бүре, ҡуян йөрәк, йылан аяғын киҫкән, мәмәй ауыҙ**), тотороҡло һүҙбәйләнештәр (**аҙым һайын, баш күтәрмәй, иҫ киткес, күҙ аҫҡыһыҙ**), образлы сағыштырыуҙар (**көсө еткәнгә көсөктәй, урта бармаҡ кеүек, һыу һөлөгө кеүек**) бирелде. Ромб артына шулай уҡ модаль төшөнсәле һәм инеш һүҙбәйләнештәр (**күп булһа, миңә тимәгәйе, мин әйтәм, үкенескә ҡаршы**), хуплау, теләк теләү, ҡарғау, янау (**бүре алғыр, ер йоткоро, йылы тәнеңдә туҙһын, ҡотло аяғың менән, күрмәгәнеңде күрһәтермен**) һ. б. шуның кеүек һүҙбәйләнештәр, төҙөлөшө менән тамамланған тулы һөйләм ҡалыбына тура килгән (**ай күрҙе, ҡояш алды; бер аяғын атлағансы, икенсеһен эт ашай; ишегенең ҡайһы яҡҡа асылғанын белмәйем**) фразеологик берәмектәр алынды. Һүҙлектең был өлөшөнә билдәле бер лексик төшөнсәле бойороҡ һөйкәлешендәге ҡылымдар (**йәшә!; кисерегеҙ!**), теләк-өндәү һөйкәлеше формаһында ҡатып ҡалған (**дөмөккөр!; суҡынғыры!**) әрләү һүҙҙәре лә индерелде. Былардан тыш халыҡтың ғөрөф-ғәҙәтенә, йолаһына (**ишек бауы, кейәү туҫтағы, ҡарға буткаһы, тауға сығыу, таҙ ҡарын кейҙереү**), төрлө ышаныу, ырымдарға (**йәннәт ҡошо, кәҙер кисәһе, ҡаф тауы, ноҡот һалыу**), төрлө уйындарға (**аҡ тирәк, күк тирәк; ҡайыш һуҡҡыс; һуҡыр тәкә**) бәйле, халыҡ ижадында ҡулланылған (**тере һыу; һыу әйәһе; бер бите ай, бер бите көн; үҙе бер ҡарыш, һаҡалы мең ҡарыш**) фразеологик берәмектәр бирелде. Был бүлеккә мәғәнәһе менән компоненттары аңлатҡан төшөнсәгә тура килмәгән ҡушма терминдар за алынды, миҫалән:

**АТ** [1] *и.* ...

♦ **Ат көсө** ҡеүәт үлсәй торған, бер системаға ла инмәгән берәмек.

**БАУЫР** *и.* ...

♦ **Бауыр ағасы** *ҡар.* **борғоса** 1.

§ 34. Мәғәнәһе менән төп һүҙгә яҡын торған, нимәнеңдер төрөн, билдәле бер өлөшөн һ. б. аңлатҡан термин рәүешендәге фразеологик берәмектәр төп һүҙҙең тейешле мәғәнәһе эсендә аңлатып бирелде, миҫалән:

**ҒӘЙЕПЛӘҮ** *к.* **1.** Ғәйебе бар, ғәйепле тип һанау... **Ғәйепләү акты** ғәйепләнеүселәрҙең ғәйебен, енәйәтен яҙған ҡағыҙ.

**КӨН** [1] *и.* **1.** ...

**6.** Тормош, көнкүреш. ... / Тыныс, уңайлы, рәхәт тормош... **Көн бөтөү** 1) тыныс, рәхәт тормош, иркенлек бөтөү; 2) ҡулланылыштан сығыу, кәрәклеге бөтөү. *Санаға көн бөттө.*

§ 35. Фразеологик берәмек ғәҙәттә төп мәғәнәне йөкмәгән һүҙ статьяһында аңлатылды. Мәғәнә яғынан төп компонентты билдәләү мөмкин булмағанда, аңлатма тәүге һүҙ буйынса бирелде.

§ 36. Фразеологик берәмектәрҙең мәғәнәләре йәйәле ғәрәп цифрҙары менән күрһәтелде, миҫалән:

**МАЙ** [1] *и.* **1.** ...

♦ **Ер майы** 1) нефть...; 2) кәрәсин...

§ 37. Фразеологик берәмек компоненттарының синонимдары булһа, улар *йәки* һүҙе менән бергә түңәрәк йәйә эсендә килтерелде, миҫалән:

**ЕЛ** *и.* **1.** ...

♦ **Бәхетһеҙгә** (*йәки* **хәйерсегә**) **ел ҡаршы...**

§ 38. Фразеологик берәмектең факультатив компоненты квадрат йәйә эсендә бирелде, миҫалән:

**ЕБӘРЕҮ** *к.* **1.** ...

♦ **[Аҫҡа] шыр ебәреү...**

## Иллюстратив материал

§ 39. Һүҙҙәрҙең мәғәнәләренә һәм төҫмөрҙәренә бирелгән аңлатмаларҙан һуң миҫалдар килтерелә. Улар һүҙҙең телмәрҙә ҡулланылышын күрһәтеү, аңлатманы тулыландырыу, шулай уҡ уны грамматик һәм стилистик йәһәттән асыу өсөн бирелде. Ошо маҡсаттан сығып, ҡайһы бер үҙенсәлекле диалект һүҙҙәренә лә миҫалдар алынды.

Фразеологик берәмектәргә миҫал килтереү мотлаҡ тип һаналмаһа ла, иллюстратив материал, ғәҙәттә, күп мәғәнәле фразеологизмдарға ҡарата бирелде. Айырым өлкәгә генә ҡараған терминдарға, профессия исемдәренә, ырыу атамаларына миҫал килтерелмәне.

§ 40. Миҫал рәүешендә килтерелгән цитаталар баҫма сығанаҡтарҙан — әҙәби әҫәрҙәрҙән, халыҡ ижадынан, журналдарҙан һәм «Совет Башҡортостаны» газетаһынан алынды. Цитата-

ның һуңында уның сығанағы йәки әҫәрҙең авторы күрһәтелде.

§ 41. Оҙон цитаталар, эстәлегенә зыян килтермәҫлек итеп, ҡыҫҡартып алынды. Ҡыҫҡартмалар һөйләм уртаһына тура килгәндә, алып ташланған һүҙҙәр урынына ике нөктә (..) ҡуйылды. Ә ҡыҫҡартыу һөйләмдең башында йәки аҙағында булғанда, бер ниндәй ҙә билдә менән күрһәтелмәне.

§ 42. Һөйләмгә һүҙҙең кем тарафынан әйтелгәнен, эш-хәрәкәттең кем тарафынан башҡарылғанын күрһәткән, йәки һүҙ кем, нәмә тураһында барғанын, асыҡлаған һүҙҙәр индерелгәндә, улар квадрат йәйә эсендә бирелде.

## ҺҮҘҘӘРГӘ ГРАММАТИК ХАРАКТЕРИСТИКА

§ 43. Һүҙҙәрҙе грамматик яҡтан тасуирлау һүҙлектәрҙә ҡабул ителгән махсус билдәләр ярҙамында башҡарылды.

§ 44. Грамматик билдәләр менән һүҙҙең ҡайһы төркөмгә ҡарағанлығы, башҡа һүҙ төркөмө функцияһында килеү осраҡтары һәм тейешле урында синтаксик функцияһы ла күрһәтелде.

## Исемдәр

§ 45. Исемдәр берлек формаһында төп килештә бирелде. Күплек формаһыида тоҡом, төр атамалары ғына төп һүҙгә айырым мәғәнә итеп, тейешле стилистик билдә менән күрһәтелде, мәҫәлән:

**КҮРӘН** [1] *и.* **1.** ...

**2. күрәндәр** *бот.* Бер өлөшлө күп йыллыҡ үҫемлектәр ғаиләһе.

§ 46. Айырым лексик мәғәнәһе булған иркәләү һүҙҙәре, баш һүҙ итеп алынып, *ирк.* билдәһе менән төп формаға тоҫҡалды. Әгәр ҙә исем эйәлек формаһында иркәләү төшөнсәһен бирһә, ул айырым мәғәнә итеп, тейешле грамматик билдә менән тулыһынса яҙып бирелде, мәҫәлән:

**БИСӘКӘЙ** *и.* **1.** *ирк. кар.* **бисә** 1.

**2.** *мыҫк.* Бисәләр эшенә ҡыҫылған ирҙәргә өйтелә.

**КӨСӨК** [1] *и.* **1.** Эт балаһы.

**2.** *эйл. ф.* **Көсөгөм** балаға иркәләп әйтелә.

§ 47. Исемдәрҙең сифат һәм башҡа һүҙ төркөмө урынында ҡулланылышы *мәғ.* билдәһе менән айырым мәғәнә итеп бирелде, мәҫәлән:

**АЙЫУ** *и.* **1.** ...

**2.** *с. мәғ.* Шул йәнлектең тиреһенән тегелгән. *Айыу тун.*

§ 48. Берәй килеш формаһында ярҙамсы һүҙ функцияһын үтәгән исемдәр төп һүҙҙә билдәләнгәндән һуң, *функцияһында* тигән тамға менән айырым лексик берәмек итеп бирелде, мәҫәлән:

**ТАРАФ** [*ғәр.*] *и.* **1.** ...

**4.** Сығанаҡ килеш аффикстары менән бәйләүес функцияһында ҡулланыла (*кар.* **тарафтан, тарафынан**).

**ТАРАФЫНАН** *бәйл. функцияһында* Төп килештәге һүҙҙәрҙән һуң килеп, эш-хәрәкәттең башҡарыусыһын белдерә.

§ 49. Исемдәрҙең йыйнаулыҡ төшөнсәһе *йыйн.* билдәһе менән күрһәтелде, мәҫәлән:

**АЛТЫН-КӨМӨШ** *и. йыйн.* ...

## Сифаттар

§ 50. Сифаттар төп дәрәжә формаһында бирелде.

§ 51. Сифаттарҙың айырым лексик төшөнсәле күплек формалары, башҡа һүҙ төркөмө функцияһында килеү осраҡтары айырым мәғәнә итеп бирелде, мәҫәлән:

**ҠУҘАҠЛЫ** *с.* **1.** ...

**2.** *и. мәғ.* **ҡуҙаҡлылар** *бот.* Орлоғо ҡуҙаҡ эсендә була торған үҫемлектәр ғаиләһе.

**ЫСЫН** *с.* 1. ...

**5.** *иниш. мәғ.* Кемдеңдер һүҙен раҫлау рәүешендә әйтелә.

§ 52. Контекста исемдең сифат, сифаттың исем йәки рәүеш функцияһында ҡулланылыу осраҡтары ҡуш һыҙык аша миҫалдар менән күрһәтелде, мәҫәлән:

**СИТСА** *и.* ... *Аҡ ситса. // Ситса күлдәк.*

**МАТУР** *с.* ... *Матур ҡыҙ. // Матурҙы һайлау. // Матур бейеү.*

**КҮҢЕЛЛЕ** *с.* ... *Күңелле кисә. // Табын күңелле үтте.*

## Һандар

§ 53. Һан төркөмсәләре грамматик билдәләр менән күрһәтелде, мәҫәлән:

**ИКЕШӘР** *бүл. һ.* ...

**БИШӘҮ** *йыйн. һ.* ...

**ӨСЛӘП** *сама һ.* ...

**УНЫНСЫ** *рәт һ.* ...

§ 54. Һандарҙың башҡа һүҙ төркөмө функцияһында килеү осраҡтары айырым мәғәнә итеп бирелде.

**ДҮРТ** *төп. һ.* **1.** 4 һаны.

**2.** *и. мәғ.* Биш баллы баһа системаһындағы «яҡшы» билдәһе.

## Алмаштар

§ 55. Алмаш төрҙәре грамматик билдәләр менән күрһәтелде, мәҫәлән:

**МИН** *зат а.* ...

**ТЕГЕ** *күрһ. а.* ...

**ҠАСАН** *һор. а.* ...

§ 56. Килеш менән төрләнгәндә нигеҙе фонетик үҙгәреш кисергән алмаштарҙың йәйә эсендә күплек һәм килеш формалары бирелде, мәҫәлән:

**БЫЛ (бының, быға, быны, бынан, бында;** *күпл.* **былар)** *күрһ. а.* ...

## Ҡылымдар

§ 57. Ҡылымдар исем ҡылым формаһында алынды.

§ 58. Ҡылым йүнәлештәре грамматик билдә менән күрһәтелеп, төп ҡылымдың тейешле мәғәнәләренә тоҫҡалды, мәҫәлән:

**ВАҠЛАТЫУ** *ҡ. йөкм. кар.* **ваҡлау.**

**КИРҘЕРЕҮ** *ҡ. йөкм. кар.* **киреү** 1, 2.

**ҠАПЛАНЫУ** *ҡ.* **1.** *төш. кар.* **ҡаплау** 1—4. ...

**2.** *кайт. кар.* **каплау** 1...

**КАҢҒЫЛДАШЫУ** *к. урт. кар.* **каңғылдау** 1.

§ 59. Исем кылым формаһында фонетик үҙгәреш кисергән кылымдарҙың йәйә эсендә нигеҙе күрһәтелде, мәҫәлән:

**АҒЫУ** [1] (аҡ≠) *к.* ...

§ 60. Нигеҙ формаһында фонетик айырмалыҡ булған омоним кылымдарҙың да йәйә эсендә төп нигеҙе күрһәтелде, мәҫәлән:

**ТАНЫУ** [1] (тан≠) *к.* ...

**ТАНЫУ** [2] (таны≠) *к.* ...

§ 61. Ярҙамлашыу төшөнсәһе булған уртаҡлыҡ йүнәлеш формаһы айырым билдә менән күрһәтелде, мәҫәлән:

**КҮТӘРЕШЕҮ** *к. урт. ярҙамл. кар.* **күтәреү** 1, 3, 4.

**КҮҘЛӘШЕҮ** *к.* **1.** *кар.* **күҙләү** [1] 1.

**2.** *ярҙамл. кар.* **күҙләү** [1] 2.

§ 62. Йөкмәтеү һәм төшөм йүнәлеше формаһындағы эйәһеҙлек төшөнсәле кылымдар грамматик билдә менән төп кылымдың тейешле мәғәнәләренә тоҫкалды, мәҫәлән:

**ИҪНӘТЕҮ** *к. эйһ. ф. кар.* **иҫнәү.**

**КИЛЕНЕҮ** *к. эйһ. ф. кар.* **килеү** 2, 3, 12.

§ 63. **Итеү, булыу, кылыу** һүҙҙәре менән яһалған аналитик кылымдар төп һүҙҙең бөтә мәғәнәләренә лә аңлатма биреп, миҫал килтерелгәндән һуң асыҡ төҫтәге квадрат (□) тамғаһы аша яңы юлдан аңлатма менән бирелде, мәҫәлән:

**ВАФАТ** [*ғәр.*] *и.* ...

□ **Вафат булыу** үлеү.

**ҒАЖИЗ** [*ғәр.*] *и.* ...

□ **Ғажиз булыу** 1) мәхрүм булыу...; 2) аптыраныу, ни эшләргә белмәү.

## Рәүештәр

§ 64. Рәүештең семантик төркөмсәләре айырып күрһәтелмәй, *р.* билдәһе менән генә бирелде, мәҫәлән:

**АҠСАЛАТА** *р.* ...

**ДӘРРӘҮ** [*фарс.*] *р.* ...

## Ярҙамсы һүҙҙәр

§ 65. Ярҙамсы һүҙҙәр грамматик билдә менән күрһәтелде, мәҫәлән:

**ЙӘКИ** *терк.* ...

**ҠЫНА** *киҫ.* ...

**МЕНӘН** *бәйл.* ...

§ 66. Сифаттың тәүге ижеге ҡабатланыу нигеҙендә яһалған көсәйтеү киҫәксәләре ҡыя һыҙыҡса аша грамматик билдә менән бирелде, мәҫәлән:

**ҠАП-** *киҫ.* Ҡа≠ ижеге менән башланған төп сифат йәки рәүешкә ҡушылып, артыҡлыҡ дәрәжәһен бирә. *Ҡап-ҡара.*

## Ымлыҡтар

§ 67. Ымлыҡтар *ымл.* билдәһе менән күрһәтелде, мәҫәлән:

**АБА** *ымл.* ...

## Модаль һүҙҙәр

§ 68. Модаль һүҙҙәр *мөн.* билдәһе менән күрһәтелде, мәҫәлән:

**КӘРӘК** *мөн.* ...

## Оҡшатыу һүҙҙәре

§ 69. Оҡшатыу һүҙҙәре *окш.* билдәһе менән күрһәтелде, мәҫәлән:

**ЫРҪ** *окш.* Бесәйҙең асыулы тауышын белдергән һүҙ.

## Стилистик билдәләр

§ 70. Стилистик билдәләр грамматик билдәләрҙән һуң ҡуйылды. Улар һүҙ, һүҙбәйләнеш һәм фразеологик берәмектәрҙең ҡулланылышындағы төрлө сикләүҙәрҙе күрһәтеү өсөн, йәғни һүҙлек составының хәҙерге торошон, һүҙҙең ҡайһы ҡатламға ҡарауын, термин булараҡ ниндәй өлкәлә ҡулланылыуын билдәләү маҡсатынан сығып, шулай уҡ экспрессив-эмоциональ үҙенсәлектәрен билдәләү өсөн ҡуйылды.

1) *диал., иҫк., һөйл.* билдәләре күберәк ябай һөйләү теленә хас, ләкин әҙәби әҫәрҙәрҙә йыш осрау мөмкинлектәре булған һүҙ, һүҙбәйләнештәргә һәм фразеологик берәмектәргә, йәки уларҙың мәғәнәләренә ҡуйылды, мәҫәлән:

**ТАЛМА** *с. диал.* Арымтал.

**АЛТАТАР** *и. иҫк.* Револьвер.

**ЭЙЕМЕК** *с. һөйл.* Аҫҡа эйеңке. *Эйемек билле ат.*

2) *дини* билдәһе дингә бәйле лексиканы күрһәтеү өсөн ҡуйылды, мәҫәлән:

**НАМАҘ** [*фарс.*] *и. дини...*

3) *кит.* билдәһе яҙма әҙәбиәткә, китап теленә хас һүҙҙәргә ҡуйылды, мәҫәлән:

**МӘҘЕХ** [*ғәр.*] *и. кит.* ...

4) *тар.* тигән билдә халыҡтың үткән тормошона һәм уны һүрәтләүгә бәйле һүҙҙәргә ҡуйылды, мәҫәлән:

**ХӘЛИФӘ** [*ғәр.*] *и. тар.* ...

5) *һир.* билдәһе ҡулланылышта һирәк осраған һүҙҙәргә йәки айырым мәғәнәләргә ҡуйылды, мәҫәлән:

**МАҠАМ** [*ғәр.*] *и.* **1.** ...

**2.** *һир.* Кешенең тотҡан урыны, дәрәжәһе...

6) *шигр.* тигән билдә күтәренке пафосты һәм хис-тойғоларҙы сағылдырған, поэзияға хас һүҙҙәргә йәки айырым мәғәнәләргә ҡарата ҡуйылды, мәҫәлән:

**БЫЛБЫЛ** [*фарс.*] *и. шигр.* ...

7) *юғары* тигән билдә тантаналылыҡ, мөһимлек төшөнсәһе булған юғары стилдәге һүҙҙәргә ҡуйылды, мәҫәлән:

**ВАФАТ** [*ғәр.*] *и. юғары* Үлем.

8) *ирк., яманл., мыҫк.* билдәләре экспрессив-эмоциональ мәғәнәле берәмектәргә ҡуйылды, мәҫәлән:

**АЛТАУЫҘ** *с. диал. яманл.* ...

**БИСӘКӘЙ** *и.* **1.** *ирк. кар.* **бисә** 1.

**КӨСӨК** *и.* **1.** ...

**3.** *кусм. мыҫк.* Балиғ булмаған йәш кеше.

9) *бал.* билдәһе балалар теленә хас һүҙҙәргә ҡуйылды, мәҫәлән:

**ҠАҠАҠ** *и. бал.* Ҡаҙ.
**ЭМЕЙ** *и. бал.* Имсәк.

10) *кыу., сакр.* билдәләре ҡош-ҡорт, йәнлектәрҙе ҡыуыу, саҡырыу өсөн ҡулланылған һүҙҙәргә ҡуйылды, мәҫәлән:

**БЕРС** *кыу.* Бесәйҙе ҡыуғанда әйтелә.
**КӨС-КӨС** *сакр.* Көсөк саҡырғанда әйтелә.

§ 71. Фән, техника, сәнғәт һ. б. айырым бер эш өлкәһенә ҡараған термин һүҙҙәр шулай уҡ стилистик билдә менән бирелде, мәҫәлән:

**ВА́КУУМ** [*рус.*<*лат.*] *и. физ., тех.* ...
**ЗӘҢГӘРСУҠ** *и. бот.* ...
**КАРБО́Н** [*рус.*<*лат.*] *и. геол.* ...
**КУЛЬТИВА́ЦИЯ** [*рус.*] *и. а. х.* ...
**ҠАБАТЛАНЫУСЫ** *и. мат.* ...
**НЕОЛОГИ́ЗМ** [*рус.*<*гр.*] *и. лингв.* ...

§ 72. Һүҙҙең йәки уның мәғәнәһенең ҡайһы өлкәгә ҡарауын ҡырҡа ғына билдәләп булмағанда *махс.* тигән билдә ҡуйылды, мәҫәлән:

**МАГАЗИ́Н** [*рус.*<*гәр.*] *и.* **1.** ...
**2.** *махс.* ... *Фотоаппарат магазины.*

§ 73. Стилистик билдә, тотош һүҙгә ҡағылғанда, мәғәнә айырымлығын билгеләгән цифрҙар алдынан, әгәр бер мәғәнәгә генә ҡараһа, шул мәғәнәгә бирелгән аңлатма алдынан ҡуйылды, мәҫәлән:

**ВАТЫУ** *к.* **1.** ...
**4.** *диал. кусм.* Ҡаҡшатыу. ...
**ҺЕРКӘ** *и.* **1.** ...
**2.** *бот.* ...
**ТЫМЫРҺЫҠ** *с. диал.* **1.** Тымпат.
**2.** *кусм.* Аҫтыртын.

## ОРФОГРАФИЯ ҺӘМ БАҪЫМ

§ 74. Һүҙлек ғәмәлдә булған орфография ҡағиҙәләренә ярашлы итеп эшләнде.

§ 75. Һүҙлек статьяһында бөтә аңлатмалар, иллюстратив материалдар, фразеологик бәйләнештәр баш хәреф менән бирелде.

§ 76. Мәғәнә эсендәге цифрҙар менән билдәләнгән төҫмөрҙәр һәм ромб артындағы фразеологик берәмектәрҙең аңлатмаһы бәләкәй хәреф менән бирелде.

§ 77. Баҫым рус теленән һәм рус теле аша үҙгәртелмәй алынған һүҙҙәргә генә ҡуйылды.

**АНТЕ́ННА** [*рус.*<*лат.*] *и.* ...
**ЗАВО́Д** [*рус.*] *и.* ...

# ШАРТЛЫ ҠЫҪҠАРТМАЛАР

| | |
|---|---|
| *а.* | алмаш |
| *авиа.* | авиация |
| *алт.* | алтай (һүҙе) |
| *анат.* | анатомия |
| *антроп.* | антропология |
| *археол.* | археология |
| *архит.* | архитектура |
| *астр.* | астрономия |
| *аныкл.* | аныҡлаусы (һүҙ) |
| *а. х.* | ауыл хужалығы термины |
| *бал.* | балалар (һүҙе) |
| *балк.* | балыҡсылыҡ термины |
| *берл.* | берлек (формаһында) |
| *билд.* | билдәләү (алмашы) |
| *билдһ.* | билдәһеҙлек (алмашы) |
| *биол.* | биология |
| *биохим.* | биохимия |
| *бойр.* | бойороҡ (ҡылым) |
| *бот.* | ботаника |
| *бухг.* | бухгалтерия |
| *бүл.* | бүлеү (һаны, теркәүесе) |
| *бәйл.* | бәйләүес |
| *вен.* | венгр (һүҙе) |
| *геод.* | геодезия |
| *геол.* | геология |
| *гидрол.* | гидрология |
| *гол.* | голланд (һүҙе) |
| *гр.* | грек (һүҙе) |
| *грам.* | грамматика |
| *груз.* | грузин (һүҙе) |
| *гәр.* | ғәрәп (һүҙе) |
| *диңг.* | диңгеҙселек термины |
| *диал.* | диалекталь (һүҙ) |
| *дини* | дини (һүҙ) |
| *дип.* | дипломатия |
| *евр.* | еврей (һүҙе) |
| *зат* | зат (алмашы) |
| *и.* | исем |
| *икел.* | икеләнеү (киҫәксәһе) |
| *инг.* | инглиз (һүҙе) |
| *инд.* | индтар (һүҙе) |
| *инш.* | инеш (һүҙ) |
| *ирк.* | иркәләү (формаһы йәки мәғәнәһендә) |
| *исл.* | исланд (һүҙе) |
| *исп.* | испан (һүҙе) |
| *иҫк.* | иҫкергән (һүҙ) |
| *ит.* | итальян (һүҙе) |
| *йөкм.* | йөкмәтеү (йүнәлеше) |
| *йыйн.* | йыйнау (мәғәнәһендә) |
| *каб.* | кабарда (һүҙе) |
| *кар.* | карел (һүҙе) |
| *кес.* | кесерәйтеү (формаһы) |
| *кесл.* | кеселекле (һүҙ) |
| *киҫ.* | киҫәксә |
| *кит.* | китап (телендәге һүҙ) |
| *клш.* | килеш |
| *коми* | коми (һүҙе) |
| *көлк.* | көлкөгә алып әйтелгән һүҙ |
| *көс.* | көсәйтеү (мәғәнәһендә) |
| *күбр.* | күберәк (ииндәйҙер бер форма йәки мәғәнәлә) |
| *күпл.* | күплек (формаһында) |
| *күрһ.* | күрһәтеү (алмашы) |
| *кәмһ.* | кәмһетеү (һүҙе) |
| *ҡ.* | ҡылым |
| *ҡаҙ.* | ҡаҙаҡ (һүҙе) |
| *ҡайт.* | ҡайтым (йүнәлеше) |
| *ҡалм.* | ҡалмыҡ (һүҙе) |
| *ҡар.* | ҡара (икенсе бер һүҙгә тоҫҡағанда) |
| *ҡарғ.* | ҡарғау (һүҙе, формаһы) |
| *ҡырғ.* | ҡырғыҙ (һүҙе) |
| *ҡыҫҡ.* | ҡыҫҡартылған (форма) |
| *ҡыт.* | ҡытай (һүҙе) |
| *ҡыу.* | ҡыуыу (һүҙе) |
| *лат.* | латин (һүҙе) |
| *латш.* | латыш (һүҙе) |
| *лингв.* | лингвистика |
| *лит.* | литва (һүҙе) |
| *лог.* | логика |
| *мал.* | малай (телдәренең һүҙе) |
| *мат.* | математика |
| *махс.* | махсус (термин) |
| *мед.* | медицина |
| *метеор.* | метеорология |
| *миф.* | мифология |
| *монг.* | монгол (һүҙе) |
| *морд.* | мордва (һүҙе) |
| *мөн.* | мөнәсәбәтле, модаль (һүҙ) |
| *муз.* | музыка |
| *мыҫк.* | мыҫҡыллау (һүҙе) |
| *мәғ.* | мәғәнәһендә |
| *мәрәк.* | мәрәкәләү (һүҙе) |
| *нан.* | нанай (һүҙе) |
| *нем.* | немец (һүҙе) |
| *норв.* | норвег (һүҙе) |
| *нуғ.* | нуғай (һүҙе) |
| *оҡш.* | оҡшатыу (һүҙе) |
| *опт.* | оптика |
| *өнд.* | өндәү (һүҙе) |
| *өндш.* | өндәшеү (һүҙе) |
| *пол.* | поляк (һүҙе) |
| *полигр.* | полиграфик термин |
| *полин.* | полинезий (һүҙе) |
| *порт.* | португал (һүҙе) |
| *радио* | радиотехника |
| *р.* | рәүеш |
| *раҫл.* | раҫлау |
| *рәт.* | рәт (һаны) |
| *рум.* | румын (һүҙе) |
| *рус.* | рус (һүҙе) |

| | |
|---|---|
| *с.* | сифат |
| *сағышт.* | сығыштырыу (формаһы йәки мәғәнәһендә) |
| *сакр.* | саҡырыу (һүҙе) |
| *сама* | сама (һаны) |
| *санскр.* | санскрит (һүҙе) |
| *синг.* | сингал (һүҙе) |
| *ситл.* | ситләтеп әйтелгән (һүҙ) |
| *сканд.* | скандинав (телдәренең һүҙе) |
| *спорт* | спорт |
| *сығ.* | сығатай (һүҙе) |
| *сығн.* | сығанаҡ (килеш) |
| *сәнг.* | сәнғәт |
| *там.* | тамил (һүҙе) |
| *тар.* | тарихи (һүҙ) |
| *тау* | тау эше термины |
| *театр.* | театраль термин |
| *телк.* | теләк (һүҙе) |
| *терк.* | теркәүес |
| *тех.* | техника |
| *т. юл* | тимер юл термины |
| *тиб.* | тибет (һүҙе) |
| *типогр.* | типография термины |
| *төб.* | төбәү (килеш) |
| *төп* | төп (килеш) |
| *төрк.* | төрөк (һүҙе) |
| *төрки* | төрки (һүҙ) |
| *төш.* | төшөм (йүнәлеше, килеше) |
| *туҡ.* | туҡыу эше термины |
| *тупаҫ* | тупаҫ (һүҙ) |
| *у.-в.* | урын-ваҡыт (килеш) |
| *умарт.* | умартасылыҡ термины |
| *урт.* | уртаҡлыҡ (йүнәлеше) |
| *үс.* | үсәү (һүҙе) |
| *ф.* | форма |
| *фарм.* | фармацевтик термин |
| *фарс.* | фарсы (һүҙе) |
| *физ.* | физика |
| *филос.* | философик термин |
| *фин* | фин (һүҙе) |
| *фин.* | финанс термины |
| *фр.* | француз (һүҙе) |
| *хим.* | химия |
| *хупл.* | хуплау (һүҙе) |
| *хушл.* | хушлашыу (һүҙе) |
| *хәб.* | хәбәр функцияһында |
| *хәрби* | хәрби термин |
| *һ.* | һан |
| *һ. б.* | һәм башҡалар |
| *һинд* | һинд (һүҙе) |
| *һир.* | һирәк ҡулланыла |
| *һор.* | һорау (алмашы) |
| *һөйл.* | һөйләү телендәге һүҙ |
| *чех* | чех (һүҙе) |
| *шарт* | шарт (ҡылым) |
| *шаяр.* | шаярыу (һүҙе) |
| *шв.* | швед (һүҙе) |
| *шелт.* | шелтәләү (һүҙе) |
| *шиғр.* | шиғри (һүҙ йәки мәғәнә) |
| *ымл.* | ымлыҡ |
| *ыңғ.* | ыңғай (формала йәки мәғәнәлә) |
| *әйл.* | әйәлек (алмашы, килеше) |
| *әйһ.* | әйәһеҙлек (мәғәнәһендә) |
| *эк.* | экономика |
| *эст.* | эстон (һүҙе) |
| *эф.* | эфиоп (һүҙе) |
| *әҙ.* | әҙәби термин |
| *әҙһ.* | әҙһетеү (формаһы) |
| *әзр.* | әзербайжан (һүҙе) |
| *әрл.* | әрләү (һүҙе) |
| *юғары* | юғары стилдә |
| *юкл.* | юҡлыҡ (формаһында) |
| *юр.* | юридик термин |
| *яманл.* | яманлау (һүҙе) |
| *япон* | япон (һүҙе) |
| *ярҙ.* | ярҙамлыҡ функцияһында |
| *ярҙамл.* | ярҙамлашып эшләү мәғәнәһендә. |

## ШАРТЛЫ БИЛДӘЛӘР

| | |
|---|---|
| // | грамматик функция (*ҡар.* § 18) |
| / | мәғәнә төҫмөрө (*ҡар.* § 18) |
| ■ | мнҫал итеп килтерелгән һүҙбәйләнештәр менән һөйләмдәрҙе айырған билге (*ҡар.* § 18) |
| .. | һөйләмдәге ҡыҫҡартмалар (*ҡар.* § 41) |
| □ | аналитик ҡылым (*ҡар.* § 63) |
| ♦ | фразеология (*ҡар.* § 33) |
| ● | мәҡәл һәм әйтемдәр (*ҡар.* § 18) |

## БАШҠОРТ АЛФАВИТЫ

| | | |
|---|---|---|
| А а | Ҡ ҡ | Ф ф |
| Б б | Л л | Х х |
| В в | М м | Һ һ |
| Г г | Н н | Ц ц |
| Ғ ғ | Ң ң | Ч ч |
| Д д | О о | Ш ш |
| Ҙ ҙ | Ө ө | Щ щ |
| Е е | П п | Ъ ъ |
| Ё ё | Р р | Ы ы |
| Ж ж | С с | Ь ь |
| З з | Ҫ ҫ | Э э |
| И и | Т т | Ә ә |
| Й й | У у | Ю ю |
| К к | Ү ү | Я я |

# А

**А**[1] Башҡорт алфавитының беренсе хәрефе.

**А**[2], **а-а-а** *ымл.* **1.** Ҡыуанысты, ҙур шатлыҡты белдергәндә әйтелә.— *А-а!!! — тип ҡысҡырып ебәрҙе Хәмит. Һеҙ ул «а-а» тигәндәң мәғәнәһен беләһегеҙме? Ул бит: «Иҫәнме, һаумы, Вәгиз? Был бит һин. Мин һине күреүгә ниндәй шат! Ниндәй ҡыуанам!» — тигән һүҙ.* С. Агиш.

2. Ауыртҡанды белдергәндә әйтелә. *Ир тағы ла нығырак ыңғыраша: «А-а-а ...»* Х. Назаров.

**А**[3], **а-а-а** *өкш.* Шаулашҡанды белдергән һүҙ. *Осоп һаҙға ҡунғанда, әйтерһең дә, абына: «А-а-а!» — тип ғауғалана ап-аҡ ҡына ағуна.* С. Кулнбай.

**АБА** *ымл.* Аптырауҙы, ғәжәпләнеүҙе белдергәндә әйтелә. [*Ихсан:*] *Ҡоҙа һаман ҡайтманымы? Аба, ҡайһылай оҙакланы.* М. Хәйҙәров. [*Хәлиулла:*] *Аба, ямғыр бик яман яуа, күк тә көлтөрәп китә.* С. Агиш.

♦ **Аба һалыу** ярҙам һорап ҡысҡырыу, бәлә һалып ҡысҡырыу.

**АБАҒА** *и.* **1.** Ҡаҙаяҡтар төркөмөнә ингән эре ҡауырһын япраҡлы күп йыллыҡ үҫемлек (ағаслыҡта, дымлы урында үҫә). *Һыу абағалары.* ■ *.Әйләнәмдә абағалы урман, уйпы ерҙәр, бөҙрә сауҡалар, ә тегендә, баҫыу ҡукрәгенде, колхоз ужымдары ҡалҡалар.* А. Игебаев.

**2. абағалар, абаға һымаҡтар** *бот.* Саң, һеркә ярҙамында үрсей торған үҫемлектәр төрөнөң атамаһы.

**АБАД** *и. ҡар.* **әбәд.**

**АБАЖУР** [*рус.*] *и.* Яҡтылыҡты бер яҡҡа йүнәлтеү өсөн лампаға ҡаплай торған махсус ҡалпаҡ. *Абажурлы шәм.*

**АБАЗИН** *и.* Ҡарасай-Черкес һәм Адыгей автономиялы өлкәләрендә йәшәгән халыҡ һәм шул халыҡтың бер кешеһе (иберий-кавказ телдәренең береһендә һөйләшә). *Абазин халҡы. Абазин теле.*

**АБАЙ** *с.* Ҡарап, самалап эш итеүсән; һаҡ. *Абай кеше. Абай булыу. // Абай йөрөү. Абай ҡыланыу.*

**АБАЙЛАМАҪТАН** *р.* Һис көтмәгәндә; аңғармаҫтан. *Абайламаҫтан ерҙә ятҡан кирбес киҫәгенә баҫтым.* Ә. Байрамов. / Һиҙмәҫтән, ирекһеҙҙән. [*Әсәһе*] *баланың тауышынан айнып киткәндәй булып, үҙе лә абайламаҫтан: «Булат, балаҡайым, атайың ҡайтманымы, тәҙрәнән ҡарап ал әле»,— тип әйтеп ҡалды.* М. Тажи.

**АБАЙЛАТЫУ** *к.* Кешегә аңғарырға, төшөнөргә мөмкинлек биреү, һиҙҙереү. [*Әптер*] *шым ғына, кешегә абайлатмай ғына Нәгимгә килә.* Һ. Дәүләтшина.

**АБАЙЛАУ** *к.* **1.** Ентекләп ҡарау, иғтибар менән байҡау. *[Ҡолмырҙа:] Санағыҙҙың тәртә төптәрен абайлап, ныҡытып егегеҙ, юлда туғарылып, ҡамасау һалып тормаһын.* Т. Хәйбуллин.

**2.** Уйлап, бик һаҡ эш итеү. *Ибрай шулай уҡ мәкерле хас дошман. Ул бик абайлап эш итә.* Ғ. Хөсәйенов.— *Ҡара-ҡара, беҙҙең Зөфәр ниндәй ғәйрәтләнәп бара! Абайла, кикрегең өҙөлмәһен, көҙгө этәс! — тине Исмәғил.* Я. Вәлиев.

**3.** Берәй эште, хәлде һиҙеп алыу; төшөнөү, аңғарыу.— *Ә һин, уйсанһың, тиһең. Әйе, уйланған саҡтар ҙа була шул. Бигерәк тә һуңғы йылдарҙа... Уны, Ғирфан, һин дөрөҫ абайлағанһың.* З. Биишева.

**4.** Ситтән күреп, һиҙеп ҡалыу. *Сос Фәхриҙең фермаға һуғылмай, башта тура өйөнә кереп сығыуын хатта һиҙгер Яҡуп күрше лә абайламай ҡалды.* Б. Бикбай.

● *Абайламай һөйләгән ауырымай үлгән.* Мәҡәл.

**АБАЙ-ТОБАЙ** *и. диал.* Айыш. *Абай-тобайын белмәй тотоноу.*

**АБАЙҺЫҘ** *с.* **1.** Иғтибарһыҙ, сос булмаған; аңыш. *Абайһыҙ булыу.*

**2.** Алдын-артын уйламай торғаи; һаҡһыҙ. // *Абайһыҙ тотоноу.* ■ *Начальник абайһыҙ эштәр эшләмәһә, .. бәлки уҙ урынында эшләр ине.* Ә. Вәли.

**АБАЙҺЫҘҘАН** *р.* Бер ҙә көтмәгәндә, уйламағанда; абайламаҫтан, аңғармаҫтан. *Абайһыҙҙан килеп баҫыу. Абайһыҙҙан килеп сығыу.* / Һиҙмәҫтән, аңғармаҫтан. *[Мулла:] Теге мәлғүн [поезд] минең сыйыҡ эсенә инә башлағас, күңелгә аҙыраҡ ҡурҡыу төшөп, абайһыҙҙан тәһәрәтемде һындырып ҡуйҙым.* И. Көҫәпҡол.

**АБАЛАНЫУ** *к. төш. ҡар.* **абалау.** *Абаланып өрөү.*

**АБАЛАТЫУ** *к. йөкм. ҡар.* **абалау.**

**АБАЛАУ** *к.* Ташланып, ярһып өрөү. *Абалап алыу.* ■ *Төн. .. Ҡараңғы. .. Йыраҡта абалап бер эт өрә.* Ш. Биҡкол.

**АБАУ**[1] *ымл.* **1.** Ҡурҡып, һиҫкәнеп киткәндә әйтелә. *Абау, аяҡ аҫтына һыу сыҡҡан.*

**2.** Мыҫҡыл итеүҙе белдергәндә әйтелә.— *Абау, эшем кешеһе Йәнтимер, йыуан менән ҡыҫҡа араһында әллә кем булып ултыра.* С. Агиш.

**3.** Аяп, иркәләгәнде белдергәндә әйтелә. *[Миңлекәй:] Абау, ҡыҙым, һағындыңмы? Әйҙә,*

*мин һиңә әллә низәр алып ҡайттым. Әйҙә ҡыҙым!* Һ. Дәүләтшина.

**АБАУ**[2] *и. иҫк. ҡар.* **һыҙлыҡ**[3]. *Ауыҙыңа абауҙың кергәне — ҡарыйлыҡтың билдәһе* (Ҡобайырҙан).

**АБАУЛАТЫУ** *к.* Ҡысҡыртыу, һөрәнләтеү. *Абаулатып ҡыуыу.*

**АБАУЛАУ** *к.* Абау[1] тип ҡысҡырыу.

**АББА́Т** [*рус.* ⟨*лат.*] *и.* **1.** Католиктарҙағы ирҙәр монастырының башлығы.

**2.** Францияләғы католиктар руханийы.

**АББРЕВИАТУ́РА** [*рус.* ⟨*лат*] *и.* **1.** Ҡыҫҡартылған ҡушма һүҙ йәки ҡыҫҡартылған һүҙҙәрҙең баш хәрефтәре (мәҫ. колхоз, ВЛКСМ).

**2.** Яҙыуҙа шартлы рәүештә ҡыҫҡартылған һүҙҙәр (мәҫ. һ. б).

**АБДАН** *р. диал.* Бөтөнләй, тамам. *Абдан арып йығылыу.*

**АБЕЛХӘЯТ** [*фарс.* ⟨*ғәр.*] *и. иҫк.* Мәңгелек ғүмер һыуы, тереклек һыуы. *Ҡәҙерле ҙур бер нәмә ул абелхәят, нур үҙе ул, һыу үҙе, ялҡын үҙе.* Ш. Бабич.

**АБЕРРА́ЦИЯ** [*рус.* ⟨*лат.*] *и.* **1.** *опт.* Оптик приборҙар аша ҡарағанда нәмәләрҙең үҙгәреп йәки тоноҡ булып күренеүе.

**2.** *астр.* Ерҙең ҡояш тирәһендә әйләнеүе һөҙөмтәһендә, йондоҙҙарҙың үҙ урынынан ауышҡан кеүек булып күренеүе.

**АБЗАҢ** *и. ҡар.* **ағаң.** *Яңы йорттан яңы бәхет көткән бер уңай менән ҡотланылар абзағыҙҙы тағы бер малай менән.* Р. Сафин.

**АБЗА́Ц** [*рус.* ⟨*нем.*] *и.* **1.** Текста эскәрәк индереп яҙылған юл башы; ҡыҙыл юл.

**2.** Тексттың бер ҡыҙыл юлдан икенсе ҡыҙыл юлға тиклем булған өлөшө.

**АБЗЫЙ** *и. диал.* Ағай. *Әй, мулла абзый, ант итәмен аллаң менән.* Ш. Бабич.

**АБИССИН** [*рус.* ⟨*ғәр.*] *и. иҫк.* Эфиоп.

**АБИТУРИЕ́НТ** [*рус.* ⟨*лат.*] *и.* **1.** Урта мәктәпте тамамлаусы.

**2.** Вузға инергә йөрөгән кеше.

**АБОНЕМЕ́НТ** [*рус.* ⟨*фр.*] *и.* Берәй нәмәнән ваҡытлыса файҙаланыу өсөн алдан алынған хоҡуҡ һәм шул хоҡуҡты раҫлаған документ. *Абонемент хаҡы.*

**АБОНЕ́НТ** [*рус.* ⟨*нем.*] *и.* Абонементҡа эйә булған кеше.

**АБОРИГЕ́Н** [*рус.* ⟨*лат.*] *и.* Берәй илдең борондан йәшәгән төп халҡы; ерле халыҡ. *Австралия аборигендары.*

**АБО́РТ** [*рус.* ⟨*лат.*] *и. мед.* Ҡарындағы баланың төшөүе йәки төшөрөлөүе. *Аборт яһау.* ■ *Ләкин аборт улай пустяк түгел. Аборт ҡайһы бер әсәләрҙең шатлыҡтарын ала ғүмергә.* Х. Ҡунаҡбай.

**АБРИКО́С** [*рус.* ⟨*фр.*] *и. ҡар.* **өрөк.**

**АБРУЙ** [*фарс.*] *и.* **1.** Халыҡ алдында ҡаҙанған ихтирам; шөһрәт. *Абруйҙы күтәреү. Абруй ҡаҙаныу. Абруйҙы төшөрөү.*

**2.** Вазифалы урындан килгән танылыҡ; авторитет. *Түрәлек абруйын һаҡлау.*

**АБРУЙЛЫ** *с.* **1.** Яҡшы яғы менән танылған; авторитетлы, хөрмәтле. *Абруйлы академиктың трибунаға сығыуын күреп, зал бер аҙға тынып ҡалды.* Д. Бураҡаев.

**2.** Ҙур вазифалы, дәрәжәле. *[Эткол байҙың] тирмәләре абруйлы ҡунаҡтар менән тулды. Ишек төбөнә еткереп түшәлгән кейеҙҙәр тирмә эсенә айырым һын биргән, ҡунаҡтар үҙҙәренең дәрәжәләренә ҡарап бүлеп ултыртылған.* Т. Хәйбуллин.

**АБСОЛЮ́Т**[1] [*рус.* ⟨*лат.*] *и.* Идеалистик философияла: бөтә ғаләмдең мәңге үҙгәрмәй торған төп нигеҙе — рух; диндә — алла. / Һис нигә, һис бер шартҡа бөйләнмәгән үҙ аллы нәмә. *Абсолютҡа әйләндереү.*

**АБСОЛЮТ**[2] [*рус.* абсолютный] *с.* **1.** Бер нисек тә сикләнмәгән, һис нигә бәйләнмәгән; шартһыҙ. *Халыҡтың абсолют үҫеше.*

**2.** Иң юғары, иң тулы, иң күп (дәүмәл, күләмгә һ. б. ҡарата). *Абсолют ауырлыҡ.*

◆ **Абсолют дәүмәл** *мат.* плюс йәки минус тамғаһы ҡуймай алынған һан. **Абсолют күпселек** бик ҙур күпселек. **Абсолют монархия** сикләнмәгән монархия, юғарғы власть тотош бер кеше ҡулында булған хакимлек формаһы. **Абсолют нуль** *физ.* мөмкин булған иң түбән температура (—273,16 °С). **Абсолют хәҡиҡәт** *филос.* объектив булмыш хаҡында тулы мәғлүмәт биргән хәҡиҡәт.

**АБСОЛЮТИ́ЗМ** [*рус.* ⟨*фр.*] *и.* Илдәге хакимлек тотош бер кеше ҡулында булған идара формаһы; сикләнмәгән монархия. *Абсолютизм дәүере. Абсолютизмға ҡаршы көрәш.*

**АБСОЛЮТЛАШТЫРЫЛЫУ** *к. төш. ҡар.* **абсолютлаштырыу.**

**АБСОЛЮТЛАШТЫРЫУ** *к.* Айырым бер өҫтөнлөккә ҡуйыу, абсолют дәрәжәһенә еткереү.

**АБСО́РБЦИЯ** [*рус.* ⟨*лат.*] *и. физ. хим.* Нәмәнең һурҙырып, һеңдереп алыныуы, йотолоуы. *Газ абсорбцияһы. Яҡтылыҡ абсорбцияһы. Абсорбция яһау.*

**АБСТРАКТ** [*рус.* абстрактный] *с.* Абстракция юлы менән алынған; ситләштерелгән. *Абстракт төшөнсә. Абстракт фекер.*

**АБСТРАКТЛАШТЫРЫУ** *к.* Берәй нәмәнең йәки күренештең айырым сифат һәм бәйләнештәренән ситләштереү.

**АБСТРАКТЛАШЫУ** *к.* Берәй нәмәнең йәки күренештең айырым сифат һәм бәйләнештәренән ситләшеү.

**АБСТРАКЦИОНИ́ЗМ** [*рус.*] *и.* 20 быуатта һынлы сәнғәттә барлыҡҡа килеп, ысын донъяны тик абстракт рәүештә һүрәтләгән үтә формалистик ағым.

**АБСТРА́КЦИЯ** [*рус.* ⟨*лат.*] *и.* Асылдағы төп сифаттарҙы билдәләү өсөн нәмә йәки күренештең ҡайһы бер яғы, үҙенсәлеге, бәйләнешенән ситләшеп уйлау алымы.

**АБСУ́РД**[1] [*рус.* ⟨*лат.*] *и.* Аҡылға һыймаҫлыҡ, мәғәнәһеҙ нәмә.

**АБСУРД**[2] [*рус.* абсурдный] *с.* Аҡылға һыймаҫлыҡ, мәғәнәһеҙ. *Абсурд һөҙөмтә. Абсурд һүҙ.*

**АБСЦЕ́СС** [*рус.* ⟨*лат.*] *и. мед.* Эрен йыйылған урын, эренле шешек.

**АБУНА** [*фарс.* ⟨*фр.*] *и. иҫк.* **1.** Абонемент.

**2.** Газета, журнал, китап алдырыу өсөн алдан яһалған килешеү; подписка. *Абуна ҡабул итеү.*

**АБУНАСЫ** *и. иҫк.* **1.** Абонент.

**2.** Газета, журнал, китапты алдан яҙылып алдырыусы кеше. *«Һабан» журналы «Башҡортостан» газетаһының йыллыҡ абунасыларына бушлай ебәрелеп торҙо.* Т. Йәнәби.

**АБУРКА** [*рус.* оборка] *и. диал.* Бала итәк; ҡатмар. *Абуркалы күлдәк.* ■ *Фәрхиә абуркалы итәген артҡа ҡыҫтырып, кирбес биреп торҙо.* Х. Ғиләжев.

**АБХАЗ** *и.* Абхаз АССР-ының төп халҡын тәшкил иткән милләт һәм шул милләттең бер кешеһе (иберий-кавказ телдәренән береһендә һөйләшә).

**АБЫЗ** *и. иҫк.* Уҡымышлы, белемле кеше. // *Абыз кеше.* ■ *Был көрәштең башында Килмәк абыз менән Хыяткӧлов, Ираткӧлов, Рысанбай тигән старшиналар тора.* Ғ. Фәхретдинов.

**АБЫЙ** *и. диал.* Ағай.

**АБЫНА-ҺӨРЛӨГӘ** *р.* Һөрлөгөп, йығыла яҙып; әләгә-төртөлә. *Абына-һөрлөгә йүгереү. Абына-һөрлөгә килеү.*

**АБЫНА-ҺӨРӨНӘ** *р. кар.* **абына-һөрлөгә.**

**АБЫНДЫРЫУ** *к. йөкм. кар.* **абыныу.**

**АБЫНЫП-ҺӨРЛӨГӨҮ** *к.* Атлағанда ҡолай яҙып, әләгеп-төртөлөү. *Күк толпар абынып-һөрлөгөп китте лә, Маянһылыу осоп төшөп ҡалды, ти.* Ҡуҙыйкүрпәс менән Маянһылыу.

**АБЫНЫП-ҺӨРӨНӨҮ** *к. кар.* **абынып-һөрлөгөү.**— *Абынып-һөрөнөп, коридор буйлап ҡолап, тиккә генә йөрөмәгәнһең икән.* Н. Ҡәрип.

**АБЫНЫУ** *к.* **1.** Күрмәй килеп, ерҙәге нәмәгә аяҡ менән төртөлөү; әләгеү, һөрлөгөү. *Бай егет был хәбәрҙе ишетә лә тағы китә. Эй бара был, эй бара. Килә торғас, ташҡа абынып йығыла* (Әкиәттән).

**2.** *күсм.* Хата эш эшләү; хаталаныу, яңылышыу. *Имгәк кенә түгел, яман ғибрәт, ике аҙымдың береһен абынды. Бар тормошо уның хата булды, ялған пәйғәмбәргә табынды.* М. Кәрим.

**АБЫСТАЙ** *и. иҫк.* **1.** Дини белемле ҡатын.— *Бына, абыстай, ҡыҙымды уҡытырға килтерҙем, ите һиңә, һөйәге миңә.* И. Кәсәпкол.

**2.** Дин әһеленең ҡатыны. *Табиба әбей башҡа йылдарҙа ҡорбан ашына иң тәүҙә Ғаббас мулланы, абыстайҙары менән мәзинде саҡырып ала торғайны.* З. Биишева.

**АБЫШҠА** *и.* **1.** Тол ир. *Аҡ ҡуяндың балаһы кереп китте ҡамышҡа. Атайымдың биргән ере — кейәү тиһәм, абышҡа* (Сеңләүҙән).

**2.** Оло йәштәге ир (үҙ ҡатынына ҡарата). *Шыҡыр-шыҡыр һайыҫҡан, аяҡтары тайышҡан. Кешегә яман булһа ла, үҙемә яҡшы абышкам* (Халыҡ йырынан). / *кәмһ.* Ир. *[Йәнбикә:] Үҙең ғәйепле. Абышҡаңды ҡатыраҡ тотмайһың.* С. Кулибай.

· ● *Аптыраған ҡатын абышҡаһын атай тигән.* Әйтем.

**АВАНГА́РД** [1] [*рус.* ⟨*фр.*] *и.* **1.** Ғәскәрҙең йәки флоттың төп көстәрҙән алда бара торған отряды. *Ҡыҙыл ракетаның һауаға күтәрелеүе булды, дивизияның авангарды — 275-се полктың һалдаттары һәм командирҙары .. ауыл янына барып та сыҡтылар.* Ә. Ихсан.

**2.** *күсм.* Йәмғиәттең алдынғы, етәксе өлөшө.

**АВАНГАРД** [2] [*рус.* авангардный] *с.* Алдынғы. *Совет йәмғиәтендә эшселәр синыфы авангард урын алып тора.* «Совет Башҡортостаны», 1986, 28 февраль.

**АВАНПОСТ** [*рус.* ⟨*фр.*] *и.* Ҡайһы бер армияларҙа (шулай уҡ батша армияһында ла) дошман һөжүмен иҫкәртеү өсөн алға ҡуйылған һаҡсы отряд.

**АВА́НС** [*рус.* ⟨*фр.*] *и.* Эш хаҡының алдан түләнгән өлөшө. *Аванс отчеты. Аванс алыу. Аванс биреү.* ■ *Колхоз үткән йылдың ғинуар башынан һәр ай һайын игенләтә һәм аксалата аванс бирә башланы.* Х. Кәрим.

**АВАНСЦЕ́НА** [*рус.* ⟨*фр.*] *и.* Сәхнәнәң алғараҡ сығып торған асыҡ өлөшө. *Авансценаға килеү.*

**АВАНТЮ́РА** [*рус.* ⟨*фр.*] *и.* Ҡотҡоға ҡоролған, еңел уңышҡа иҫәп тотоп башланған эш. *Хәрби авантюра.*

**АВАНТЮРИ́ЗМ** [*рус.*] *и.* Еңел уңышҡа иҫәп тотҡан, принципһыҙлыҡҡа, авантюраға ҡоролған эшмәкәрлек. *Политик авантюризм.*

**АВАНТЮРИ́СТ** [*рус.*] *и.* Авантюра менән шөғөлләнгән кеше. *Политик авантюрист.*

**АВАНТЮРИСТИК** *с.* Авантюраға ҡоролған. *Авантюристик политика.*

**АВАР** *и.* **1.** Дағстан АССР-ында йәшәгән халыҡ һәм шул халыҡтың бер кешеһе (иберий-кавказ телдәренең береһендә һөйләшә). *Авар халҡы. Авар ҡатыны. Авар теле.*

**2.** 6 быуатта Дунай буйҙарына килеп, 8 быуат аҙағына тиклем шунда дәүләт булып йәшәгән төрки ҡәбиләләр.

**АВА́РИЯ** [*рус.* ⟨*ит.*] *и.* Хәрәкәттәге машинаның, механизмдың һ. б. боҙолоуы, һәләкәткә осрауы; һәләкәт. *Аварияға осрау. Аварияға юлыҡыу. Аварияға юл ҡуймау.* ■ *Наил тап дренаж бигенә үрелгәндә генә — шартлау, авария...* Х. Зарипов. **Авария бригадаһы** авария ваҡытында ярҙамға килгән, аварияны бөтөрөү эшен башҡарған бригада. **Авария машинаһы** аварияның һөҙөмтәһен бөтөрөү өсөн тәғәйенләнгән махсус машина.

**А́ВГУСТ** [*рус.*] *и.* Календарь йылдың һигеҙенсе айы (*кар.* **календарь**).

**АВИАБА́ЗА** [*рус.*] *и.* Складтары, мастерскойҙары һәм башҡа кәрәк-яраҡтары булған аэродром.

**АВИАБЕНЗИ́Н** [*рус.*] *и.* Самолёт бензины.

**АВИАБО́МБА** [*рус.*] *и.* Самолёттарҙан ташлана торған бомба.

**АВИАДВИ́ГАТЕЛЬ** [*рус.*] *и.* Самолёт двигателе.

**АВИАДЕСА́НТ** [*рус.*] *и.* Һауа десанты.

**АВИАКОНСТРУ́КТОР** [*рус.*] *и.* Самолёттар йәки авиация төҙөгән конструктор.

**АВИАЛИ́НИЯ** [*рус.*] *и.* Траспорт самолёттарының ике араға осҡан даими юлы.

**АВИАМОДЕЛИ́ЗМ** [*рус.*] *и.* Оса торған аппарат моделдәрен яһау һәм осороп ҡарау эше. *Авиамоделизм менән шөғөлләнеү.*

**АВИАМОДЕЛСЕ** *и.* Авиамоделизм менән шөғөлләнгән кеше. *Авиамоделселәр клубы.*

**АВИАМОДЕ́ЛЬ** [*рус.*] *и.* Оса торған аппарат моделе.

**АВИАНО́СЕЦ** [*рус.*] *и.* Самолёттар ултыра һәм осоп китә торған майҙаны булған ҙур хәрби карап.

**АВИАПО́ЧТА** [*рус.*] *и.* Һауа транспорты менән йөрөтөлгән почта.

**АВИА́ТОР** [*рус.* ‹ *фр.*] *и.* Осош менән шөғөлләнгән кеше; осоусы, лётчик.

**АВИА́ЦИЯ** [*рус.* ‹ *фр.*] *и.* **1.** Оса торған аппараттарҙың һауала хәрәкәтләнеү теорияһы һәм практикаһы.

**2.** Оса торған аппараттар йыйылмаһы; һауа флоты. *Хәрби авиация. Ауыл хужалығы авиацияһы. Авиация мәктәбе. Авиация промышленносы.* ■ *Дошман шашынып контратакаға күсте. Уның штурм авиацияһы ярҙамға килде.* К. Мәргән.

**АВИТАМИНО́З** [*рус.* ‹ *гр.+лат.*] *и. мед.* Аҙыкта витамин етешмәгәндән килгән ауырыу. *Авитаминоз булыу. Авитаминоздан котолоу.*

**АВРА́Л** [*рус.* ‹ *ингл.*] *и.* **1.** *диңг.* Карапта бөтә команда катнашлығы менән үтәлә торған эш.

**2.** *күсм. һөйл.* Үҙ ваҡытында башкарылмағанды ашыктырып үтәү өсөн ойошторолған күмәк эш.

**АВСТРАЛИЙ** *и.* Австралияла йәшәгән халык һәм шул халыктың бер кешеһе. *Австралий телдәре.*

**АВСТРИЙ** *и.* Австрияның төп халҡын тәшкил иткән милләт һәм шул милләттең бер кешеһе. *Австрий халкы. Австрий катыны.*

**АВТОБА́ЗА** [*рус.*] *и.* Автомобилдәрҙең эшен ойоштороған предприятие, шулай уҡ уларҙың тора һәм ремонтлана торған урыны. *Автобазала эшләү.*

**АВТОБИОГРАФИК** *с.* Автобиографияға мөнәсәбәтле. *Автобиографик повесть.* ■ *Автобиографик әҫәрҙәрҙә яҙыусы үҙенең тормош юлын, индивидуаль яҙмышын тасуирлау аша билдәле бер эпоха кешеләре өсөн хас булған һыҙаттарҙы аса.* М. Ғималова.

**АВТОБИОГРА́ФИЯ** [*рус.* ‹ *гр.*] *и.* Кешенең үҙ тормош юлын тасуирлаған яҙыу. *Ауыл советына автобиографияма мисәт баҫтырырға бар[ҙым].* Ә. Вахитов.

**АВТО́БУС** [*рус.* ‹ *нем.*] *и.* Кешеләрҙе йөрөтә торған күп урынлы автомобиль. *Автобус хәрәкәте. Автобуска ултырыу.* ■ *Һыу сәсрәтеп мостовойҙан етеҙ автобустар уҙалар.* Ғ. Сәләм.

**АВТО́ГРАФ** [*рус.* ‹ *гр.*] *и.* **1.** Авторҙың үҙ кулы менән яҙған яҙмаһы. *Тикшеренеүселәр Владимир Ильичтың әлегә кәҙәр билдәле булмаған автографтарын һаман табып торалар.* «Совет Башҡортостаны», 1966, 22 апрель.

**2.** Авторҙың култамғаһы. *Автограф алыу. Автограф биреү.*

**АВТОИНСПЕ́КЦИЯ** [*рус.*] *и.* Автомобилдәр хәрәкәтенең дөрөҫлөгөн күҙәтеү эше һәм шуны башкарған дәүләт органы.

**АВТО́Л** [*рус.*] *и.* Нефттән алынған шыйык кара май.

**АВТОЛА́ВКА** [*рус.*] *и.* Машина менән йөрөтөп һата торған ларёк.

**АВТОМАГИСТРА́ЛЬ** [*рус.*] *и.* Автомобилдәрҙең етеҙ йөрөшөн тәьмин итерлек оло юл.

**АВТОМА́Т** [*рус.* ‹ *гр.*] *и.* **1.** Кеше катнашлығынан тыш үҙ алдына эшләй торған аппарат, машина, прибор.

**2.** Тиҙ ата торған еңел һуғыш коралы; пистолет-пулемёт. *Ауыл осонда көслө автомат тауыштары яңғырап китте.* С. Кулибай.

**АВТОМАТИК** *с.* Кеше катнашлығынан тыш, үҙ алдына эшләгән. *Автоматик контроль. Автоматик станция. Автоматик үлсәү. Автоматик рәүештә фотоға төшөрөү.*

**АВТОМА́ТИКА** [*рус.*] *и.* **1.** Фән һәм техниканың эш процестарын автоматлаштырыу буйынса эш алып барған тармағы.

**2.** Автоматик рәүештә эшләй торған корамалдар. *Хәҙер Белорет металлургия заводы .. катмарлы технология процесы менән автоматика аша ғына идара итә.* «Совет Башҡортостаны», 1984, 22 март.

**АВТОМАТЛАШТЫРЫЛЫУ** *к. төш. кар.* **автоматлаштырыу.** *Автоматлаштырылған телефон станцияһы.*

**АВТОМАТЛАШТЫРЫУ** *к.* Автоматик ысулға күсереү. *Етештереү процестарын автоматлаштырыу. Производствоны автоматлаштырыу.*

**АВТОМАТЛАШЫУ** *к.* Автоматик ысулға күсеү.

**АВТОМАТСЫ** *и.* **1.** Автоматик корамалда эшләгән эшсе.

**2.** Автомат менән коралланған һуғышсы.

**АВТОМА́ТЧИК** [*рус.*] *и. кар.* **автоматсы.**

**АВТОМАШИ́НА** [*рус.*] *и. кар.* **автомобиль.**

**АВТОМОБИ́ЛЬ** [*рус.* ‹ *фр.*] *и.* Рельсһыҙ юлдарҙа йөк һәм кеше ташый торған эске яныуға королған двигателле үҙе йөрөмәле машина. *Еңел автомобиль. Йөк автомобиле. Автомобиль промышленносы.*

**АВТОНО́МИЯ** [*рус.* ‹ *гр.*] *и.* Эске идара эштәрен үҙ алдына хәл итеү хокуғы. *Буржуаз автономия. Ерле автономия. Автономия алыу. Автономия биреү.* ■ *Бөйөк Октябрь социалистик революцияһының еңеүе аркаһында ғына Башкортостан автономия алды.* «Совет Башкортостаны», 1964, 22 март.

**АВТОНОМИЯЛЫ** *с.* Үҙ алдына идара итеү хокуғы булған. *Башкорт Автономиялы Совет Социалистик Республикаһы.*

**АВТОПИЛО́Т** [*рус.*] *и.* Осоу аппараты менән автоматик рәүештә идара итә торған кулайлама.

**АВТОПОРТРЕ́Т** [*рус.*] *и.* Рәссам йәки скульпторҙың үҙе эшләгән үҙ һүрәте. *Ә теге ағасты көйҙөрөп эшләгән автопортрет һуң? Тимербай ағайҙың тап үҙе түгелме ни?!* З. Биишева.

**А́ВТОР** [*рус.* ‹ *лат.*] *и.* Әҙәбиәт, сәнғәт әҫәрен, ғилми эш һ. б. ижад итеүсе кеше. *Операның авторы. Проект авторы. Романдың авторы.*

**АВТОРҘАШ** *и.* Кем менәндер берлектә бер нәмәнең авторы булған кеше. *Китаптың авторҙашы. Мәкәләнең авторҙашы.*

**АВТОРЕФЕРА́Т** [*рус.*] *и.* Ғилми хеҙмәттең автор тарафынан яҙылған рефераты. *Диссертацияның автореферады.*

**АВТОРИТЕ́Т** [*рус.* ‹ *нем.*] *и.* Абруй, дәрәжә.

**АВТОРИТЕТЛЫ** *с.* Акылы, яҡшылығы менән танылған, ихтирам ителгән; абруйлы, дәрәжәле.

*Авторитетлы етәксе.* ■ *Укытыусы халык алдында авторитетлы булырға тейеш.* М. Тажи.

**АВТОРЛАШТЫРЫЛЫУ** *к. төш. кар.* **авторлаштырыу**. *Авторлаштырылған әҫәр.*

**АВТОРЛАШТЫРЫУ** *к.* Үҙ әҫәренден тәржемәһен, ҡүсермәһен һ. б. рәсми рәүештә хуплау, шуға ризалыҡ белдереү.

**АВТОРЛЫҠ** *и.* Автор сифатында хеҙмәткә, әҫәргә эйә булған хәл. *Авторлыҡ танытмаһы.* **Авторлыҡ хокуғы** авторҙың хокуғын билдәләй торған юридик нормалар йыйылмаһы.

**АВТОРУ́ЧКА** [*рус.*] *и.* Эсенә ҡара тултырып яҙа торғаи ручка. *Перолы авторучка. Шариклы авторучка.*

**АВТОСТРА́ДА** [*рус.*] *и. кар.* **автомагистраль.**

**АГА́ВА** [*рус.* ⟨*гр.*] *и.* Эре, ҡаты япрағынан сүс алына торған тропик үҫемлек. *Кинжал кеүек ҡукһел ҡыяғын һелтәп таштар өҫтөнә, бөтә һутын бүлеп, агава гүзәл сәскә үҫтерә.* Ә. Вәли.

**АГАҺ** [*фарс.*] *с. иск.* Алдан белгән, хәбәрҙар.

**АГАҺЛАНДЫРЫУ** *к. иҫк.* Алдаи белдереп, һиҙҙереп ҡуйыу; иҫкәртеү. *Өмөтбай менән Йәноҙаҡ һайлау алдынан ике ай борон уҡ үҙ ауылдарының ярлыларын йыйып, Этколдарҙың әтлектәрен энәһенән ебенә тиклем аңлатып, ярлы халыҡты агаһландырып ҡуйғайнылар.* Ғ. Дәүләтшин.

**АГГЛЮТИНАТИВ** [*рус.* агглютинативный] *с. лингв.* Һәр бер грамматик мәғәнәнең үҙенә башҡа ялғауы булып, шуларҙы һүҙ артынан берҙер артлы теҙеп бнрә торғаи. *Агглютинатив телдәр.*

**АГГЛЮТИНА́ЦИЯ** [*рус.* ⟨*лат.*] *и. лингв.* Бер-бер артлы теҙелгән үҙ аллы ялғауҙар ярҙамында һүҙ һәм грамматик форма яһауҙан ғибәрәт күренеш (төрки, фин-уғыр һ. б. ҡайһы бер телдәргә хас).

**АГЕ́НТ** [*рус.* ⟨*лат.*] *и.* **1.** Берәй ойошманың, учреждениеның һ. б. эш башҡарыусы вәкиле. *Страховка агенты.*

**2.** Кем йәки нимәнеңдер мәнфәғәтенә хеҙмәт иткән кеше.

**3.** Снт илдә йәшерен эш алып барған кеше; шымсы.

**АГЕНТЛЫҠ** *и.* Берәй үҙәк ойошманың, учреждеииеның урыидағы аралашлыҡ йәки информация бүлеге. *Банк агентлығы. Телеграф агентлығы.*

**АГЕ́НТСТВО** [*рус.*] *и. кар.* **агентлыҡ.**

**АГЕНТУ́РА** [*рус.*] *и.* **1.** Йәшерен мәғлүмәттәр йыйыу, ҡоротҡослоҡ эше алып барыу өсөн ойошторолған эшмәкәрлек.

**2.** *йыйн.* Шул эштә йөрөгәи кешеләр; агенттар.

**АГИТА́ТОР** [*рус.* ⟨*лат.*] *и.* Агитация алып барған кеше. *Айбулат ултырған вагонда Титов та, Альков та бар. Улар өсәүһе лә Ярославский полктың үткер большевистик агитаторҙары.* Һ. Дәүләтшииа.

**АГИТАЦИОН** [*рус.* агитационный] *с.* Агитация маҡсатыиа йүнәлешле, агитацняға мөнәсәбәтле. *Агитацион эш.* ■ *Һуғыштың тәүге йылдарындағы шиғырҙар ялҡынлы патриотизм тойғоһо менән һуғарылған агитацион шиғырҙар ине.* Ә. Харисов.

**АГИТА́ЦИЯ** [*рус.* ⟨*лат.*] *и.* Халыҡҡа политик йоғонто яһау өсөн телдән йәки яҙма рәүештә алып барылған эш. *Күргәҙмә агитация. Агитация эше. Агитация алып барыу.* ■ *Беҙ аранан кешеләр бирмәү тураһындағы агитацияны тағы ла көсәйттек.* Д. Юлтый.

**АГИТАЦИЯЛАУ** *к. кар.* **агитирлау.**

**АГИТБРИГА́ДА** [*рус.*] *и.* Агитация эше алып бара торған төркөм. *Агитбригада сығышы.*

**АГИТГРУ́ППА** [*рус.*] *и.* Берәй ваҡиға йәки эш уңайы менән агитация алып барыу өсөн ойошторолған махсус төркөм.

**АГИТИРЛАУ** *к.* **1.** Агитация алып барыу, агитация үткәреү. *[Председатель:] Һеҙ, мөғәллимә иптәш,.. минең ураҡсылар янына барып, шуларҙы аҙырак агитирлап йөрөһәгеҙ яҡшы булыр ине.* М. Тажи.

**2.** *һөйл.* Өгөтләү.

**АГИТПУ́НКТ** [*рус.*] *и.* Агитация эштәрен ойоштора торған урын, йорт.

**АГИТҺӘЙӘТ** *и. иҫк.* Агитгруппа. *1924 йыл май аҙағында күсмә дәүләт труппаһы, күсмә кино аппараты һәм агитһәйәт — барлығы ун өс кеше ил араһына сыҡты.* Ғ. Хөсәйенов.

**АГЛОМЕРА́Т** [*рус.* ⟨*лат.*] *и.* **1.** *геол.* Тау тоҡомдарыиың уҡмашҡан кәүшәк ҡатышмаһы.

**2.** *тех.* Иретеп уҡмаштырылған киҫек-киҫек руда.

**АГНО́СТИК** [*рус.*] *и.* Агностицизм яҡлы кеше.

**АГНОСТИ́К** *с.* Агностицизмға мөнәсәбәтле. *Агностик ҡараш.*

**АГНОСТИЦИ́ЗМ** [*рус.* ⟨*гр.*] *и.* Объектнв донъяны һәм уның законлыҡтарын өйрәнеп белеү мөмкинлеген кире ҡаҡҡан идеалистик философик тәғлимәт.

**АГРАР** [*рус.* аграрный ⟨*лат.*] *с.* **1.** Ергә, ер бнләүгә бәйле. *Аграр мәсьәлә. Аграр реформа.*

**2.** Игенселек менән шөғөлләнгән. *Аграр ил. Аграр район.*

**АГРЕГА́Т** [*рус.* ⟨*лат.*] *и.* Дөйөм бер эш башҡарыу өсөн үҙ-ара бәйле бер нисә төрлө машинанан төҙөлгән ҡатмарлы ҡоролма. *Ашлыҡ таҙартыу агрегаты. Сәсеү агрегаты. Һауыу агрегаты.* ■ *Комбайн агрегаты баҫыу буйлап килә. Бункерға гәрәбә кеүек саф иген аға.* Ә. Вәли. / Ниндәй ҙә булһа машинаның билдәле бер эш үтәй торған ҡатмарлы өлөшө. *Конструкцияһы ҡатмарлы булған машиналар .. агрегаттарға бүленә.*

◆ **Есемдең агрегат хәле** *физ.* есемдең ниндәй ҙә булһа бер физик торошо (ҡаты, шыйыҡ, газ хәлендәге].

**АГРЕССИВ** [*рус.* агрессивный] *с.* Агрессияға мөнәсәбәтле. *Агрессив көстәр. Агрессив һуғыш.* / Дошмансыл. *Агрессив кеше.*

**АГРЕ́ССИЯ** [*рус.* ⟨*лат.*] *и.* Бер-бер илдең ерен баҫып алыу, халҡын буйһондороу, иркен сикләү ниәте менән яһалғаи ҡоралды һөжүм; баҫҡынсылыҡ, яу.

**АГРЕ́ССОР** [*рус.*] *и.* Агрессия яһаусы; баҫҡынсы.

**АГРОБИОЛОГИК** *с.* Агробиологияға мөнәсәбәтле. *Агробиологик фән.*

**АГРОБИОЛО́ГИЯ** [*рус.*] *и.* Игенселек, үҫемлекселек һәм малсылыҡтағы дөйөм биологик

законлыҡтар, уларҙы ауыл хужалығында файҙаланыу тураһындағы фән.

**АГРОНО́М** [*рус.*] *и.* Агрономия өлкәһендә эшләгән белгес. *Колхоз агрономы.*

**АГРОНОМИК** *с.* Агрономияға мөнәсәбәтле, агрономияға бәйле. *Агрономик фән.*

**АГРОНО́МИЯ** [*рус.* ⟨ *гр.*] *и.* Игенселек эше тураһындағы фән һәм ауыл хужалығының бөтә тармаҡтары буйынса белем.

**АГРОПРО́М** *и. һөйл. ҡар.* **агропромышленность.**

**АГРОПРОМЫ́ШЛЕННОСТЬ** *и.* Ауыл хужалығы менән промышленностың продукция етештереү, эшкәртеү һ. б. буйынса үҙ-ара бәйле тармаҡтарының йыйылмаһы. *Агропромышленность интеграцияһы. Агропромышленность комплексы.*

**АГРОТЕ́ХНИК** [*рус.*] *и.* Агротехника буйынса белгес.

**АГРОТЕХНИ́К** *с.* Агротехникаға мөнәсәбәтле, агротехникаға бәйле. *Агротехник алым. Агротехник саралар. Агротехник белем.*

**АГРОТЕ́ХНИКА** [*рус.*] *и.* Ауыл хужалығы культураларын үҫтереүҙә ҡулланылған ысулдар системаһы.

**АҒА** *и.* **1.** *ҡар.* **ағай** 1.

**2.** Оло, дәрәжәле ир кеше. *Унда йәйләүгә сыҡҡан кешеләр араһындағы иң ҡарт ағаның тирмәһен ҡутәргәндәр.* Ғ. Дәүләтшин.

◆ **Ил ағаһы** аҡылы, эше менән халыҡ араһында хөрмәт ҡаҙанған олпатлы, дәрәжәле кеше. *Быуындан-быуынға килгән ғәҙәт-комартҡыны ил ағалары ырым һаҡлағандай һаҡлағандар.* Ғ. Вәлиев.

● *Айыуға барһаң, ағаң менән бар.* Әйтем.

**АҒАЙ** *и.* **1.** Йәшкә үҙеңдән оло булған бер туған ир-ат. *Оло ағай. Кесе ағай. Бер туған ағай.* / Үҙеңдән оло, ата-әсәңдән кесе ир туған. *Ағай тейеш кеше. Ике туған ағай. Яҡын ағай.* / Шул кешегә өндәшеү һүҙе. *Бер оянан сыҡҡан ике ҡоштай, айырылышабыҙ, ағай, инде хуш* (Сеңләүҙән). **Ағай алғансы, еңгәкилгәнсе** ағайҙың, кәләш алғас, туғандарына һыуыныуы, еңгә һүҙе менән генә йөрөүе тураһында әйтелә.

**2.** Йәш яғынан үҙеңдән оло, ата-әсәңдән кесе ир кеше. / Шул кешегә өндәшеү һүҙе. *[Таймор-зин:] Туҡта, Ғаббас ағай, аҙ ғына уйлашайыҡ.* М. Тажи. / Уҡытыусыға өндәшкәндә әйтелә.— *Ағай, мин токарь станогының валын һындырҙым!* Б. Бикбай.

**3.** Үгәй атай.

◆ **Ағай оло, мин ҙур** оло кешенән алға сығып берәй нәмә эшләгәндә әйтелә.

**АҒАЙ-ЕҢГӘ** *и. йыйн.* Үҙеңдән оло, ата-инәңдән кесе булған ир-ат менән ҡатын-ҡыҙ.

**АҒАЙРЫҠ** *и.* Ике өлөшлөләр ғаиләһәнә ингән, һаҙмат урында үҫә торған һоло башлы эре үлән.

**АҒАЙ-ЭНЕ** *и. йыйн.* **1.** Бер атаның улан-дары. / Бер ата-бабанан таралған ир туғандар; туған-ырыу. *[Айбулат] биш-алты быуын айырылған булһа ла, бер ырыуҙан булғанлыҡтан, Ныязғолға ағай-эне һанала ине.* Һ. Дәүләтшина.

**2.** Йыйылған халыҡ, йәмәғәт (өндәшкәндә әйтелә). *Ғаббас Сынбулатов.., докладын һөйләп бөткәс, халыҡҡа тағы ла .. мөрәжәғәт итте: «Ағай-эне, мин күҙгә сәсеү мәсьәләһенә ҡағылманым. Ул әле башлана ғына».* М. Тажи.

● *Ағай-эне талаша, атҡа менһә, яраша.* Әйтем.

**АҒАЙ-ЭНЕЛЕ** *с.* Туған-ырыуы күп, нәҫелнәсәпле. *Ағай-энеле кеше.*

**АҒАЛА** *и.* Ҡарағаста үҫә торған ҡаты аҡ бәшмәк. *Ағаланы борон дарыу итеп ҡулланғандар.* Т. Баишев.

**АҒАЛТЫН** *и. һөйл.* Платина.

**АҒАЛЫ-ҺӘҢЛЕЛЕ** *р.* Ағай менән һеңле бергә. *Ағалы-һеңлеле киттеләр.*

**АҒАЛЫ-ЭНЕЛЕ** *р.* Ағай менән эне бергә. *Ағалы-энеле килгәндәр.*

**АҒАҢ** *и. шаяр.* Маһайған булып һөйләшкәндә, «мин» тигәнде аңлата. *Ағаң менән иплән һөйләш.*

**АҒАР** *с.* Туҡтауһыҙ ағып ятҡан, аға торған. *Ағар күл. Ағар һыу.*

● *Ағар һыуҙың кәҙере юҡ.* Әйтем.

**АҒАРТТЫРЫУ** *к. йөкм. ҡар.* **ағартыу** 1, 5.

**АҒАРТЫЛЫУ** *к. төш. ҡар.* **ағартыу** 1, 5. *Ағартылған мейес.*

**АҒАРТЫУ** *к.* **1.** Аҡҡа буяу; аҡлау. *Мейес ағартыу. Өй ағартыу.* ■ *[Гөлъямал] аҡ балсыҡ иҙеп, сыуалын, усағын, көлдөксәһен ағартты.* Я. Хамматов.

**2.** Төҫөн алыу, төҫһөҙләндереү; аҡ төҫкә индереү, аҡҡа әйләндереү.

**3.** Кейемдең керен бөтөрөү; таҙартыу. *Тау аҫтынан шишмә аға, керҙе ағарта торған* [Халыҡ йырынан].

**4.** Берәй нәмәне йышып таҙартыу, ялтыратыу. *Самауыр ағартыу.*

**5.** Сал төҫкә индереү; салландырыу. *Сәсте ағартыу.*

**6.** *күсм.* Таҙа, ғәйепһеҙ итеп күрһәтеү. *Яман әҙәм шул булыр — ауыҙында ике тел булыр: алдыңда һине ағартыр, артыңда һине ҡаралтыр* (Ҡобайырҙан).

**7.** *күсм.* Аң-белем таратыу; аңлы-белемле итеү. *Ағартыу эше.* ■ *[Ғафури] бөтә бәлә, ғазап халыҡтың ҡараңғылығынан килә, тип уйланы. Был ҡәһәр тормоштан ҡотолоу өсөн, милләтте ағартырға кәрәк тигән фекергә килде.* З. Шәрҡи.

● *Баҡырҙы күпме ағартһаң да көмөш булмаҫ.* Әйтем.

**АҒАРТЫШЫУ** *к. урт. ярҙамл. ҡар.* **ағартыу** 1, 3, 4. *Өй ағартышыу. Самауыр ағартышыу.*

**АҒАРЫНЫУ** *к.* Аҡ төҫкә инеү (йөҙгә, биткә ҡарата); төҫ ҡасыу, ҡобара осоу. *Зилскийҙең йөҙө һулыны. Бер ағарынды, бер күгәренде.* Ғ. Дәүләтшин. *Ҡурҡышынан ағарынған сауҙагәр ала ҡарғаның һораған нәмәһен бирергә риза булды, ти* (Әкиәттән).

**АҒАРЫУ** *к.* **1.** Аҡ төҫкә инеү. *Арыштан ҡалмай, бойҙай менән һоло ла ағарып етеп килә.* М. Кәрим.

**2.** Аҡ булып күренеү. *Ағарып ятыу.* ■ *Алыҫтарҙан ағарып күренгән Ирәндекәй тауҙың аҡ ташы* (Халыҡ йырынан).

**3.** Төҫтө юғалтыу, төҫһеҙләнеү. *Кешеләр*

*араһынан башына йәмшәйеп бөткән фуражка, өҫтөнә көнгә уңып агара башлаган һоро буҫтау гимнастёрка кейгән сандыр буйлы бер йәш кеше күренде.* М. Тажи. / Төҫ ҡасыу, ҡобара осоу. *Һылыу ҡортҡа бер агарып, бер ҡыҙарып ултырҙы ла, өйҙә сит кеше лә булгас, ҡаршылыҡ күрһәтергә батырсылыҡ итмәне.* Т. Йәнәби. *Кейеҙбай көҙгөгә ҡарау менән агарып китә, йөрәген ҡурҡыу ала* (Әкиәттән).

**4.** Керҙән таҙарыу (тәнгә, кейемгә ҡарата). *Аҡлы ситса күлдәктәрҙе агарганса йыуғандар* (Бәйеттән).

**5.** Йышылып таҙарыу, ялтырау (металға ҡарата). *Диләнең бик оҙаҡ маташҡанын күргәс, Гөлйөҙөм ваҡыт таба һалып, үҙе самауырҙарҙың агармай ҡалган ерҙәрен тиҙ генә агартты.* Һ. Дәүләтшина.

**6.** Сал төҫкә инеү; салланыу. *Көндәр менән сәстәр агарһа ла, был йәш илдә йөрәк агармаҫ.* Ғ. Хәйри.

**7.** *күсм.* Яҡшырыу, һәйбәтләнеү (тормошҡа ҡарата). *Заманга заман уралган, берәү бәхетен бере алган. Алгандың көнө агарган, алмагандың — ҡаралган* (Ҡобайырҙан).

● *Кем менән ҡарайганһың — шуның менән агар.* Мәҡәл.

**АҒАС** *и.* **1.** Ҡаты олонло, ботаҡлы күп йыллыҡ үҫемлек. *Ылыҫлы агас. Япраҡлы агас. Беше агас. Йомшаҡ агас. Емеш агасы. Агас ботагы. Агас ҡырҡыу. Агас ултыртыу.* ■ *Агастарҙы һалҡын сихырлаган, улар йоҡлай төрөнөп бәҫтәргә. Ботаҡтарҙы елдәр һелкеткәндә, ошо бәҫтәр ҡуна сәстәргә.* М. Кәрим. *Ҡарагай ҙа агас бейек агас, менеп булмай кирәм булмагас* (Халыҡ йырынан). **Ҡара ағас** ҡара төҫтәге ҡаты тропик ағас. **Ҡыҙыл ағас** затлы нәмәләр эшләй торған яҡшы сифатлы көньяҡ ағасы.

**2.** Шул үҫемлектең төрлө маҡсатта ҡулланыу өсөн ҡырҡып алынған өлөшө. *Утын агасы. Агас агыҙыу. Агас әҙерләү. // Агас көрәк. Агас өй.*

**3.** Ырыуҙың бер билдәһе. *Мерәс ауылынан Аҡбулат бабай беҙгә үҙҙәренең агасы — имән, ҡошо — торна, тамгаһы — йәйә, орандары — „муйнаҡ“ булганын әйтте.* К. Мәргән.

**4.** *с. мәг. күсм. мыҫҡ.* Үҙ эшен белмәгән, насар (һөнәр эйәһенә ҡарата). *Уны яҡындан белеүселәр, айырыуса йәштәр: «Шәүәли ҙә булган икән кеше! Агас адвокат бит ул»,— тип кенә ебәрәләр.* Б. Бикбай.

◆ **Ағас атҡа атландырыу** бик оҫта итеп алдау; һемәйтеү. **Ағас ауыҙ** һүҙ рәте белмәгән, тупаҫ телле. **Ағас аяҡ** 1) зәғиф аяҡҡа ялғанған терәк; 2) солоҡҡа менгәс, баҫып тора торған ике баулы яҫы ағас. **Ағас еләге** *диал.* ҡурай еләге (*ҡар.* **еләк**). **Икмәк ағасы** тут ағастар ғаиләһенә ҡараған, емеше ашарға яраҡлы тропик ағас. **Урын ағасы** киндер станыының нигеҙе.

● *Агас — емеше менән, әҙәм — эше менән.* Әйтем. *Бер агас мейестә лә янмаҫ, ике агас яланда ла һүнмәҫ.* Мәҡәл.

**АҒАСАҠ** *и.* Һаҙандар төркөмөнә ингән, сөсө һыуҙа йәшәй торған аҡһыл төҫтәге эре йыртҡыс балыҡ; ағасъяңаҡ.

**АҒАСЛАНЫУ** *ҡ.* Ағас кеүек булып ҡатыу. *Йәй урталарына ҡаҡы ашарлыҡ булмай, агасланып китә.*

**АҒАСЛЫҠ** *и.* Бер өйкөм ағас үҫкән урын. *[Гуляй:] Ә бына был агаслыҡ беҙҙең Агиҙел ярына бара торган частарҙы йәшереп торасаҡ.* Р. Ниғмәти.

**АҒАС-ТАШ** *и. йыйн.* Өй һ. б. нәмә төҙөү өсөн файҙаланылған һәр төрлө материал. *Революцияга тиклем бөтә ауыл агас-таш менән кәсеп итеп, йәйен тәгәрмәс тугыны, ҡышын сана табаны бөгөп гүмер иткән.* Ш. Янбаев.

**АҒАСЪЯҢАҠ** *и. ҡар.* **ағасаҡ.**

**АҒАСЫ** *и. диал.* Нағасы.

**АҒЗА** [*гәр.*] *и.* **1.** Организмдың билдәле бер вазифа үтәгән өлөшө; орган. *Аш һеңдереү агзалары. Телмәр агзалары.* ■ *Донъя малы өсөн ҡайгырмайым, көллө агзаларым һау булгас* (Халыҡ йырынан).

**2.** Берәй ойошмала, идарала торған кеше. *Идара агзаһы. Партия агзаһы. Профсоюз агзаһы.*

**АҒЗАМ** [*гәр.*] *с. иҫк.* Бик бөйөк, ололоҡло.

**2.** (*баш хәреф менән*) Ир-ат исеме.

◆ **Ағзам хәҙрәттәре** батшаны ололап әйтеү һүҙе.

**АҒЛАУ** *ҡ. иҫк. кит.* Илау. *Гүзәллек баҡсаһын ситтән күреп, һайра булып гашиҡ. Былай һайрау ҡауышҡандан һуң аглауҙан булыр артыҡ.* М. Ғафури.

**АҒУНА** *и.* Тауыҡтар төркөмөнә ҡараған, ҡышын аҡ, йәйен көңгөрт төҫтә була торған ҡырағай ҡош. *Ҡанаттары ап-аҡ ҡына — бына һеҙгә агуна. Һиҙгер, йылгыр, бик һаҡ ҡына, ул һаҙлыҡта була.* С. Кулибай.

**АҒУТА** *и. иҫк.* Түрә, аҙамат.

**АҒҮҘӘК** *и. диал.* Йөлөн.

**АҒЫҘҘЫРЫУ** *ҡ. йөкм. ҡар.* **ағыҙыу.** *Һыу менән агыҙҙырыу.*

**АҒЫҘЫЛЫУ** *ҡ. төш. ҡар.* **ағыҙыу.** *Ике яҡ тауҙың итәген ҡырлатып, ҙур ҡанауҙар ҡаҙҙырылып, алтын фабрикаһы өсөн һыуҙар агыҙылды.* Т. Хәйбуллин.

**АҒЫҘЫУ** *ҡ.* **1.** Быуылып, бикләнеп торған шыйыҡлыҡҡа ағырға мөмкинлек биреү. *Быуаны йырып агыҙыу. Мискәнән кәрәсин агыҙыу. Самауырҙан һыу агыҙыу.* / Торба, канал буйлатып шыйыҡлыҡты ҡыуыу. *Нефть агыҙыу.*

**2.** Йылға ағышы ыңғайына берәй нәмәне ебәреү. *Бүрәнә агыҙыу. Һал агыҙыу.* ■ *[Сәгиҙә:] Саңгылар агып китте. Улымдың саңгыларын агыҙып ебәрҙем.* М. Тажи. / Ағым ыңғайына алып китеү (һыуға ҡарата). *Акселәндең ташҡыны ҡаршылыҡтарҙы емереп, сүп-сарҙы таҙартып агыҙып алып киткән.* Б. Бикбай.

**3.** Ҡан, йәш һ. б. түгеү, ҡойолтоу. *Йәш агыҙыу. Тир агыҙыу.* ■ *[Сәгиҙә] ҡайнар күҙ йәштәрен уның [ҡыҙының] һыуынган йөҙөнә агыҙҙы.* Һ. Дәүләтшина. *Дегәнәк алмаларҙы өйкәй-өйкәй ҡанлы һуттарын агыҙа, ти* (Әкиәттән).

**4.** Һурҙырыу, ҡыуыу (кәрәҙле балды).

◆ **Ауыҙ һыуын** (*йәки* **шеләгәйҙе**) **ағыҙыу** тәмле нәмәгә ымһыныу; там итеү.

**АҒЫҘЫШЫУ** *ҡ. урт. ярҙамл. ҡар.* **ағыҙыу** 1, 2, 4.

**АҒЫЛЙЫМ** *с. кар.* **аҡһыл.**

**АҒЫЛЫЙ: ағылыйға тағылый** *һөйл.* эйәреп, арттаи ҡалмай йөрөгән кешегә ҡарата әйтелә.

**АҒЫЛЫУ** *ҡ.* **1.** Бер яҡҡа табан туҡтауһыҙ үтеп тороу, хәрәкәт итеү. *Берҙән-бер көндө, яланда һарыҡ көтөп йөрөгәндә, Кейеҙбай юлдан бер туҡтауһыҙ кешеләр ағылғанын күрә* (Әкиәттән)./Өйкөм-өйкөм булып эркелеп, өҙлөкһөҙ күсеү (болот, төтөн, томан һ. б. нәмәгә ҡарата). *Ағыла ла болот, ай ағыла, тауҙан ғына тауға ҡағыла* (Халыҡ йырынан)./*күсм.* Күмәкләп, берҙәмләшеп берәй ойошмаға инеү. *Колхозға, туғандар, колхозға! Бер төптән ағылып инәйек.* Б. Бикбай.

**2.** Күпләп түгелеү, ҡойолоу (ҡан, тиргә ҡарата). *Тирҙәр ағыла, ҡандар һауыла, малдар шулай табыла* (Халыҡ йырынан).

**3.** *күсм.* Бер ыңғай менән генә тулҡынып сығыу. *Ягымлы музыка ағыла.* ■ *Тыуған йырҙар гүзәллеге булып, йөрәктән йыр күпме ағыла.* Н. Нәжми.

**АҒЫМ** [1] *и.* **1.** Һыу, һауаның бер йүнәлештәге хәрәкәте. *Түбәнге ағым. Урта ағым. Үрге ағым. Һауа ағымы.* ■ *Агиҙелдең ағымын күргәндә һеҙҙе һағынып йырҙар яҙырмын.* Д. Юлтый.

**2.** Ижтимағи-политик йәки әҙәби йүнәлеш. *Әҙәби ағым.* ■ *[Казаков:] Бер ағым, бер группаға ла монополлекте бирергә ярамай. Дәүергә ярарлы стиль табылыр, ләкин ул икенсе метод менән табылыр.* С. Агиш.

**3.** Бер йүнәлештәге талғын хәрәкәт (болот, күк есемдәренә ҡарата). *Болоттар ағымы.*

**4.** Күмәк төркөмдөң бер йүнәлештәге хәрәкәте. *Халыҡ ағымы.* ■ *Кешеләр ағымы шаулап аҡҡан саҡта, һин урамдан үттең бик үйсән.* Ғ. Амантай.

**5.** *күсм. кар.* **ағыш** 2. *[Айбулаттың] шоморт ҡара күҙҙәре кешегә тура ҡарай, үҙенең фекер ағымына ҡарап, бер йылы нур ала, бер ут уйнатып яна.* Һ. Дәүләтшина.

**6.** *кар.* **конвейер. Ағым методы** завод, фабрикала нәмәне бер-бер артлы ҡулдан-ҡулға күсереп эшләү ысулы.

**АҒЫМ** [2] *с. диал.* Ағын.

● *Ағым һыуҙы ат кисер, ауыр көндө ир кисер.* Мәҡәл.

**АҒЫМДАҒЫ** *с.* Ошо көндә дауам иткән, ғәмәлдә булған; көндәлек. *Ағымдағы политика. Ағымдағы ваҡиғалар.*

**АҒЫН** *с.* Ағып ятҡан, аҡҡан (һыуға ҡарата). *Агиҙелкәй һыуы әй ағын һыу, ағын һыу буйҙары ҡамышлы.* Ғ. Сәләм.

**АҒЫНДЫ** *с. диал.* Ағар. *Ағынды һыу.*

**АҒЫТЫЛЫУ** *ҡ. төш. кар.* **ағытыу.** *Ағытылған ҡолондар.*

**АҒЫТЫУ** *ҡ.* Ҡымыҙға бәйләгән һауын бейәләрҙе ҡолондары менән иркенгә ебәреү (төнгөлөккә ашатыр өсөн йәки көҙөн ҡымыҙ һауҙы туҡтатҡас). *Ҡолон ағытыу.* ■ *[Гөлйөҙөм:] Бейәләрҙе кисен ҡолондарына ҡушып ҡырға ҡыуалар. Ҡолондар шунда рәхәтләнеп төн буйына әсәләрен имеп йөрөйҙәр. Бына шуны «бейә ағытыу» тиҙәр беҙҙә.* З. Биишева.

**АҒЫТЫШЫУ** *ҡ. урт. ярҙамл. кар.* **ағытыу.**

**АҒЫУ** [1] (аҡ*) *ҡ.* **1.** Бер йүнәлештә хәрәкәт итеү (шыйыҡлыҡҡа ҡарата). *Уйылып ҡына аҡҡан Уйыл һыуы уйландыра уйсан да ирҙәрҙе* (Халыҡ йырынан). / Һарҡып йәки тамсылап төшөү. *Зыяның салбар балаҡтарынан шыбырлап һыу ағып тора.* М. Тажи. / Ярыҡ-тишектән тамсылау. *Самауырҙың һеләгә аға бит әле! Бер самауыр ҡуйыйым тиһәң, ыҙаланып бөтәһең, әйтәгүр!* Ғ. Дәүләтшин. / Һарҡып сығып түгелеү, ҡойолоу (ҡан, йәш һ. б. нәмәгә ҡарата). *Яҙғы ташҡын аҡҡан һыу кеүек, ҡыҙҙар йәше шулай ағырмы?* (Халыҡ йырынан).

**2.** Һыу менән ҡуша хәрәкәт итеү. *Шулай итеп, был байғош япа-яңғыҙ тора ла ҡала. Кейемдәре ле ағып китә* (Әкиәттән).

**3.** Бер-бер артлы талғын хәрәкәт итеү. *Күк йөҙөн ҡаплаған болоттар ҡояш байышы яғынан өргән ел менән ҡайҙалыр ашығып-ашығып ағалар ине.* Ғ. Дәүләтшин.

**4.** Төркөм-төркөм булып, өҙлөкһөҙ үтеп тороу, килеү. *Ҡара халыҡ ишанға көн дә ағыр, һәр төрлө һүҙҙе һөйләп, хәбәр табыр* (Бәйеттән).

**5.** *күсм.* Бер-бер артлы күңелгә килеп үтеү; ағылыу (уй, хискә ҡарата). *Йырым күңелдәргә ятһын, йырым минең тынмай аҡһын.* Р. Ғарипов. / Бер ыңғайға оҙаҡ яңғырап ишетелеү. *Таш башынан бик моңло бер йыр ишетелә ине. Ҡатын-ҡыҙ тауышы, һүҙҙәре асыҡ ишетелмәй. Ә моң, ҡараңғылыҡ пәрҙәһен тишеп, аға ла аға.* Н. Мусин. / Ян-яҡҡа таралыу (нурға ҡарата). *Ә ҡояштан ҡыҙыл нур уҡтары ағалар!* Р. Ниғмәти.

**6.** *күсм.* Күпләп ҡулға инеү; яуыу (аҡсаға, байлыҡҡа ҡарата).

**7.** Өҙлөкһөҙ үтеү (ваҡытҡа ҡарата). *Көндәр аҡты ташҡан һыуҙар кеүек.* Ғ. Хәйри.

◆ **Аҡмаһа ла тама** әҙ-мәҙ булһа ла эләгә, ҡулға төшә (мал, аҡсаға ҡарата). *[Рыҫҡол — Әлмәтҡә:] Һеҙ тик шул. Түрәләр алдында яҡшатлана беләһегеҙ, аҡмаһа ла тамып тора һеҙгә.* Б. Бикбай.

● *Һыу ағыр, таш ҡалыр.* Әйтем.

**АҒЫУ** [2] *и.* **1.** Тереклек өсөн зәһәрле матдә; ыу. *Йылан ағыуы. Үрмәксе ағыуы. Химик ағыу.* ■ *Хәҙерге ваҡытта ҡорт ағыуынан .. бик күп шифалы дарыу яһайҙар.* В. Ғүмәров. **Ағыу бiҙе** ҡайһы бер йән эйәләренең ағыу яһала торған биҙе (мәҫ. йыланда). **Ағыу теше** йыландың ағыу ебәрә торған теше.

**2.** *күсм.* Кешенең тормошона, күңеленә насар йоғонто яһай торған нәмә. *Һуғыш!.. Был кәһәрле бер генә һүҙ бөтә кешеләрҙең мейеһенә ҡурҡыныс ағыу йүгертте.* Һ. Дәүләтшина.

◆ **Ағыу сәсеү** уҫал ниәт менән зәһәрле һүҙ һөйләү.

● *Асыу — ағыу, үткәрһәң — дарыу.* Мәҡәл.

**АҒЫУЛАҒЫС** *и.* Орлоҡ ағыулай торған машина.

**АҒЫУЛАНЫУ** *ҡ.* **1.** *төш. кар.* **ағыулау.**

**2.** *ҡайт. кар.* **ағыулау.** *Ағыуланып үлеү.*

**АҒЫУЛАТЫУ** *ҡ. йөкм. кар.* **ағыулау.**

**АҒЫУЛАУ** *ҡ.* **1.** Ағыу биреү, ағыу менән зарарлау. *Ағыулап үлтереү.*

**2.** Сәсеүлектәрҙе, игенде ағыулы химикаттар менән эшкәртеү. *Гөлнисалар орлоҡ ағыулай.*

*Айсыуаҡтар һабан йүнәтә. Аҡһаҡаллы ҡарттар бау ишә. Яҙ алдынан аттар ял итә.* Т. Йәнәби.

**3.** *күсм.* Насар эш-ҡылыҡ менән кешенең тормошона, күңелеиә зарар итеү. *Ник һыҙлайһың, күңелем, ник юҡ өсөн ағыулайһың минең аңымды.* Ш. Бабич.

**АҒЫУЛЫ** *с.* **1.** Ағыуы булған. *Ағыулы бәшмәктәр. Ағыулы йылан. Ағыулы матдә.*

**2.** *күсм.* Яуыз уйлы; зәһәрле. *Ағыулы тел.* ■ *Кеше йөҙө бешкән алма кеүек, ә йөрәге шундай ағыулы.* Ғ. Хәйри.

**АҒЫУҺЫҘЛАНДЫРЫУ** *к.* Ағыуын бөтөрөү, зарарлы тәьҫирен юҡҡа сығарыу.

**АҒЫШ** *и.* **1.** Һыу, һауаның һиҙелгән хәрәкәте. *Ай уймаҡай кеүек һыҙылып аға Ашҡаҙарҡай һыуының ағышы* (Халыҡ йырынан).

**2.** Берәй эш-хәлдең барышы; ағым. *Вакиғалар ағышы. Эштең ағышы.* ■ *Тигеҙ түгел тормош ағышы; бар шатлығы, ҡайғы, һағышы.* К. Даян.

**3.** *күсм.* Уй, фекер, һүҙ барышы. *Һүҙ ағышына ҡолаҡ һалыу.*

**4.** *кар.* **ағым** [1] 3. *Ижтимағи ағыш.*

♦ **[Эште] үҙ ағышына ҡуйыу** (*йәки* **ебәреү**) берәй эшкә хәстәрһеҙ ҡарау.

**АДАПТА́ЦИЯ** [*рус.* ⟨*лат.*] *и.* **1.** *биол.* Организмдың, һиҙеү органдарының тышҡы шарттарға яраҡлашыуы.

**2.** Сит телдә яҙылған тексттың ябайлаштырылыуы (өйрәнеүгә еңел булһын өсөн).

**АДВОКА́Т** [*рус.* ⟨*лат.*] *и.* Ғәйепләнгән кешене судта яҡлаусы йәки хоҡуҡтар буйынса кәңәш биреүсе юрист. *Хәҙер [Шәүәли] райондағы адвокаттар коллегияһында штаттан тыш юрист булып эшләй.* Б. Бикбай.

**АДЖАР** *и.* Ғрузиндарҙың Аджар АССР-ында йәшәгән этник төркөмө һәм шул төркөмдөң бер кешеһе. *Аджар халҡы. Аджар ҡатыны.*

**АДМИНИСТРАТИВ** [*рус.* административный] *с.* Администрацияға мөнәсәбәтле, администрацияға бәйле. *Административ вазифа. Административ эш.*

**АДМИНИСТРА́ТОР** [*рус.*] *и.* Берәй эш менән етәкселек иткән вазифалы кеше.

**АДМИНИСТРА́ЦИЯ** [*рус.* ⟨*лат.*] *и.* Предприятиеның, ойошманың идара итеү органы һәм шул идарала эшләгән кешеләр. *Завод администрацияһы. Институт администрацияһы.*

**АДМИРА́Л** [*рус.* ⟨*гол.* ⟨*гәр.*] *и.* Хәрби диңгеҙ флотындағы иң юғары дәрәжә һәм шул дәрәжәләге кеше. *Флот адмиралы.*

**А́ДРЕС** [*рус.* ⟨*фр.*] *и.* **1.** Почта аша ебәрелгән нәмәләрҙең тәғәйенләнгән урынын һәм кешеһен күрһәткән яҙыу. *Хаттың адресы.* ■ *[Әхмәҙиғә] хат яҙғанда минән сәләм яҙығыҙ. Адресымды яҙығыҙ.* Һ. Дәүләтшина.

**2.** Мөһим ваҡиға уңайы менән берәй нәмәне ҡотлаған яҙыу. *Иттифаҡсылар халыҡты алдауға ҡоролған беренсе думаны ҡотлап, батшаға адрес ебәрҙе.* Ғ. Рамазанов.

**АДРЕСА́НТ** [*рус.*] *и.* Почта аша адреслап хат йә башҡа нәмә ебәргән кеше йәки ойошма.

**АДРЕСА́Т** [*рус.*] *и.* Хат йә башҡа нәмәлә адресы күрһәтелгән кеше йәки ойошма. *Һуғыш үткән ер аҫтында аҙмы дуҫтар ҡалдылар. Аҙмы хаттар адресатын тапмай, кире ҡайттылар.* Т. Арслан.

**АДРЕСЛАНЫУ** *к. төш. кар.* **адреслау.**

**АДРЕСЛАУ** *к.* Хат йә башҡа нәмәне берәй адресҡа тәғәйенләү.

**АДЪЮТА́НТ** [*рус.* ⟨*лат.*] *и.* Юғары дәрәжәләге хәрби начальник янында ярҙамсы булған йәки штаб эшен башҡарған офицер. *Генерал үҙенең шоферы менән йәнәш ултырҙы, ә беҙ — уның адъютанты, телефонист һәм мин, артҡы урындарға ултырҙыҡ.* Ә. Бикчәнтәев.

**АДЫГЕЙ** *и.* Адыгей автономиялы өлкәһенең төп халҡы һәм шул халыҡтың бер кешеһе (иберий-кавказ телдәренең береһендә һөйләшә). *Адыгей халҡы. Адыгей ҡатыны. Адыгей теле.*

**АҘ** *р.* **1.** Һаны, күләме ғәҙәттәгенән кәм; кәм һанда, күләмдә. *Аҙ белеү. Аҙ күреү. Аҙ һөйләү.* ■ *Мин башты аҙ ғына күтәреп ҡараным һәм бөтөнләй аптырап киттем.* С. Агиш. / Сағыштырмаса дауамы ҡыҫҡа. *Аҙ йәшәү. Аҙ тороу.*

**2.** *с. мәғ.* Һаны, күләме бәләкәй; әҙ; *киреһе* күп. *Аҙ аҡса. Аҙ ҡанлылыҡ. Газетаның тиражы аҙ. Аҙ һүҙ.* ■ *Бик аҙ ғына шаҙралыҡ бар, булһа булһын, зарар юҡ, кершән яҡһаң ипләберәк.* Ш. Бабич. *Ҡара һин уны, үҫә бит редактор, ҡайһылай аҙ һүҙле, эшлекле булып бара...* Б. Бикбай./Оҙаҡ дауам итмәгән, тиҙ үткән. *Аҙ ғүмер. // Аҙға риза булыу. Аҙҙы өмөт итеү.* ■ *Ҡояштың урман артына йәшеренеүенә бик аҙ ваҡыт ҡалғайны.* Д. Юлтый. *Садрый Маҡсуд, күпте көт, аҙҙы онот, юҡты ҡуйырт.* Ш. Бабич.

♦ **Аҙ тигәндә** кәм тигәндә, кәмендә. *Аҙ тигәндә биш көн кәрәк булыр.* **Бер аҙ** бер ни тиклем, бер ни ҡәҙәр. *Мансур бер аҙ ғына уйланып торҙо.* М. Тажи. **Бер аҙға** бер ни тиклем ваҡытҡа. *Айбулат, һөйләүенән бер аҙға туҡтап, Ныязғолдоң ярһыуы баҫылғанын көттө.* Һ. Дәүләтшина. **Бер аҙҙан** бер ни тиклем ваҡыттан һуң. *Бер аҙҙан теге Хәйруллин да беҙҙең янға килеп ҡушылды.* С. Агиш.

● *Аҙ кешене күп кеше бер яйға килтерер.* Мәҡәл. *Аҙамат ирҙең билдәһе — аҙ һөйләр ҙә күп тыңлар, арғымаҡ аттың билдәһе — аҙ утлар ҙа күп юшар.* Мәҡәл. *Күпте өмөт итеп, аҙҙан ҡоро ҡалма.* Әйтем. *Ҡунаҡ аҙ ултырыр, күп һынар.* Әйтем.

**АҘАҒЫ-БАШЫ: аҙағы-башы шул** бар булғаны шул, бөтәһе шул.

**АҘАҒЫНАСА** *р.* Тамам булғанса, һуңына тиклем, бөткәнсе. *Нефтте аҙағынаса яндырһаң, 0,002—0,015 процент көл ҡала.* Д. Бураҡаев.

**АҘ-АҘЛАП** *р.* **1.** Аҙ-аҙ ғына итеп, аҙ күләмдә. *Аҙ-аҙлап ашау. Аҙ-аҙлап өйрәнеү.*

**2.** Әкренләп. *Бала аҙ-аҙлап шәбәйә башланы.*

**АҘАЙТЫЛЫУ** *к. төш. кар.* **аҙайтыу.**

**АҘАЙТЫУ** *к.* Күләмеи йәки һанын кәметеү. *Ғәскәрҙе аҙайтыу. Малды аҙайтыу.*

**АҘАЙЫУ** *к.* Күләм йәки һаи яғынан кәмеү. *Йылғаның һыуы аҙайған.*

**АҘАҠ** [1] *и.* **1.** Билдәле бер ваҡыттың, миҙгелдең бөтөп барған өлөшө, һуң. *Йыл аҙағы. Йәй аҙағы. Көн аҙағы. Ай аҙағында.* / Эш-хәлдең йәки берәй нәмәнең тамамланыуға барған һуңғы өлөшө, һуң. *Эш аҙағы.*

**2.** Эш-хәлдең һөҙөмтәһе, һуңынан килеп сыҡҡан шауҡымы; эҙемтә.— *Хупъямал, ҡара, арҡыры төшә торған булһаң, аҙағы насар булыр.* Һ. Дәүләтшина.

● *Һүҙҙең башынан элек аҙағын уйла.* Әйтем.

**АҘАҠ**[2] *р.* **1.** Бер ии тиклем ваҡыт үткәс; һуңыраҡ. *Аҙаҡ улар ҡайтып китте аманлашып, батырҙарға төшкән эште тамамлашып.* «Бабсаҡ менән Күсәк».

**2.** Берәй эш-хәл булғас, шунан һуң. *Шунан аҙаҡ [Өйрәнсек], Һөнәрсе үлгәс, уның ҡултамғаһы өҫтөнә үҙ тамғаһын баҫҡан да, данлы һөнәрсе булып та алған.* З. Биишева. / Берәйһенең артынан. *Минән аҙаҡ. Һинән аҙаҡ.*

♦ **Аҙаҡ килеп** ахыр сиктә, тора-бара, аҙаҡтан. *Ғәжәп-Сәйет эт булып оҙаҡ йөрөгән, күп ерҙәрҙе гиҙгән. Аҙаҡ килеп, батша һарайындағы байлыҡты һаҡлап тора башлаған* (Әкиәттән).

● *Яуҙан аҙаҡ йоҙроҡ күтәргән.* Әйтем.

**АҘАҠҠЫ** *с.* **1.** Билдәле бер ваҡыт тамамланыуға яҡынлаған мәлдәге. *Аҙаҡҡы ай. Аҙаҡҡы минут.*

**2.** Төрлө эш-хәл йәки нәмәнең рәт-тәртибендәге иң һуңғы. *Аҙаҡҡы өмөт. Аҙаҡҡы һүҙ.* ■ *[Янһары] аҙаҡҡы тоҙағына ҡараһа, ни күҙе менән күрһен, быныһына бик һылыу бер ҡыҙ эләккән* (Әкиәттән).

**АҘАҠТАН** *р.* Ни ҙә булһа тамамланғас, нимәнәндер һуң йәки билдәле бер ваҡыт үткәс; һуңынан. *Фәһимә башта йүгерҙе, аҙаҡтан атлап китте.* С. Агиш. *Иң аҙаҡтан Аҡъял батыр арҡанға үҙе тағылып менеп киткән, ти* (Әкиәттән).

**АҘАЛАНДЫРЫУ** *к. йөкм. ҡар.* **аҙаланыу.**

**АҘАЛАНЫУ** *к.* Ниндәйҙер теләк менән яныу, ашҡыныу; шашыныу. *[Хәмдиә иренә:] Үҙ башыңа аҙаланып йөрөйһөңмө! Ни булды һиңә?* С. Агиш. / Бер ерҙә тора алмай йөрәкһеү. *[Таңдыса:] Аҙаштырмаҫ ерҙән аҙаштырҙы аҙаланған өс баш малғынам.* «Ҡуңырбуға».

**АҘАМАТ** [*ғәр.*] *и.* **1.** Халыҡ алдында танылған оло, хөрмәтле кеше; ил ағаһы. *Ил аҙаматы.* ■ *Яҡшы аҙамат йорт күтһә, йорто имен көтөлөр* (Ҡобайырҙан).

**2.** Көскә ултырған, ныҡлы батыр ир. // *Аҙамат ир.* ■ *Ҡоралды аҙаматтар дейеү батшалығына ер һелкетеп, донъя шаулатып килеп еткән, ти, бер заман* (Әкиәттән).

● *Кешегә шәфҡәт итеп юл бир, аҙаматҡа хөрмәт итеп ҡул бир.* Әйтем.

**АҘАМАТЛЫ** *с.* **1.** Бөйөк. *Аҙаматлы аҡһаҡал.*

**2.** Ғорур. *Аҙаматлы кеше.*

**АҘАН** [*ғәр.*] *и. дини* Намаҙға саҡырғанда йәки балаға исем ҡушҡанда әйтелә торған ҡыҫҡа доға; тәкбир. *Иртәнге аҙан. Киске аҙан.* ■ *Иртә тороп тышҡа сыҡһам, аҙан тауышы яңғырай* (Халыҡ йырынан). **Аҙан әйтеү** аҙан доғаһын уҡыу. *Мәзин карт аҙан әйтергә тип ике ҡулы менән ҡолаҡтарын ғына тотҡайны, ауыл яғынан председатель .. менән бер нисә кеше килеп сыҡты.* А. Карнай.

**АҘАНСЫ** *и. дини* **1.** Аҙан әйтеүсе.

**2.** Мәзин.

**АҘАНЫУ** *к. диал.* Ни эшләргә лә белмәй, аптырашҡа ҡалыу; ҡаушау. *Аҙанып тороу.* ■ *Шлыков, ҡапыл ғына ни әйтергә белмәй, аҙанып ҡалды.* Ш. Бикҡол.

**АҘАП** [*ғәр.*] *и.* **1.** Баштан кисерелгән эш, тормош ауырлығы; ыҙа, яфа; михнәт. *Шулай итеп, мең бәлә менән атты ҡыуып алып ҡайтам. Шул тиклем аҙап менән йөрөп ҡайтҡас, улар .. тиргәй.* М. Ғафури. **Аҙап күреү** (*йәки* **сигеү**) ыҙаланыу, яфа күреү. *Меңләгән эшсе халыҡ аҙап сигә шул төрмәнән.* Т. Йәнәби.

**2.** Мәшәҡәтле, ығы-зығылы эш. *Ер һатыу ул — ҡотороусыларҙың, шуның арҡаһында байып ҡолырға тырышыусыларҙың аҙабы.* Т. Хәйбуллин.

● *Юл аҙабы — гүр ғазабы.* Әйтем.

**АҘАПЛАНДЫРЫУ** *к.* **1.** Ауыр хәлгә ҡуйып яфалау; этләндереү. *Аҙапландырып йәшәтеү.*

**2.** Арлы-бирле һупалап эшләү; маташтырыу. *[Гүзәл:] Бына ниндәй йүнһеҙ кешеләр була донъяла, эште эш итеп эшләмәйҙәр, ә күҙ буяу өсөн генә аҙапландыралар.* И. Ғиззәтуллин.

**АҘАПЛАНЫУ** *к.* **1.** Ауырлыҡ кисереү, яфаланыу, ыҙаланыу. *Гөлйөҙөм төнө буйы аҙапланды. Күҙгә ут күренерлек итеп алған әсе тулғаҡтан һуң маңлайынан шыбыр тирҙәр аҡты.* Һ. Дәүләтшина.

**2.** Берәй эште башҡарып маташыу. *[Яруллин] ҡалушының ыңын һулға, һулын уңға кейеп аҙапланды.* С. Агиш. *Ҡамыш араһында [һыңар] ҡанаты менән генә талпынып, бер ҡыр ҡаҙы осорға аҙаплана.* М. Ғафури.

**АҘАПЛАУ** *к.* Йәбер итеү, ауырлыҡ күрһәтеү; ыҙалау, яфалау. *[Балаларҙың береһе:] Апай беҙгә батшалар, байҙар тураһында һөйләне: элек улар эшселәрҙе, крәҫтиәндәрҙе аҙаплап тотҡан, ти.* С. Ҡудаш.

**АҘАПЛЫ** *с.* Ауырлығы күп булған; яфалы, ыҙалы. *Ҡурайсы әлегә донъяла тиңе етмәгән ҡыр ҡурайының йөрәктәрҙе иретерлек моңо арҡыры, башҡорттарҙың .. ике мең йыллыҡ аҙаплы тарихын асып бирә.* Ғ. Дәүләтшин.

**АҘАРЫНЫП-БИҘӘРЕНЕҮ** *к.* Бик ныҡ үтенеү; ялыныу, ялбарыу. *Егет кеҫәрткене үлтерергә бер ҙә генә риза булмаған. Кеҫәртке уға төрлөсә әйтеп ҡараған, аҙарынып-биҙәренеп инәлгән* (Әкиәттән).

**АҘАРЫНЫУ** *к.* **1.** Үтенеп һорау; ялыныу, инәлеү. *Йәй бик эҫе, ҡоро булды. Кешеләр һәр көн зарығып, аҙарынып ямғыр көттө.* З. Биишева.

**2.** Аһ-зарҙы кешегә белдереү, үҙ хәлеңде зарланып һөйләү. *Ҡолағын мамыҡ менән тыҡҡанға аҙарыныр һүҙ ҡайҙа* (Ҡобайырҙан). / *дини* Тәңрегә зарыңды һөйләп уҡыныу. *Аллаға аҙарыныу.*

**АҘАУ**[1] *к.* **1.** Ни эшләргә белмәй, аптырау; ҡаушау. *Көтөлмәгән хәбәрҙән аҙап ҡалыу.* ■ *Ҡарамырҙа ла ҡапыл ишетелгән тауыштан аҙап ҡала.* Х. Ғәбитов.

**АҘАУ**[2] *к.* Оҙаҡ һаҡланыу, оҙаҡ һаҡланып иҫкереү. *Ҡымыҙ аҙаған, ғыҙлап тора.*

**АҘАУ**[3] *с.* Оҙаҡ һаҡланған, оҙаҡ һаҡланып иҫкергән. *Аҙау бал. Аҙау бесән. Аҙау таҡта. Аҙау ҡар.* ■ *Аҡланда лыпашып бөткән ҡапҡара аҙау кәбән ултыра: был аҡландарҙы үткән йылдарҙа сапҡан булырға тейештәр.* Ж. Кейекбаев.

**АҘАУ** [4] *с. диал.* Аҫау.

**АҘАУ** [5] *и.*, **аҙау теш 1.** Яңаҡтың төп яғындағы яҫы теш; яңаҡ теше. *Куш аҙаулы һоҫа теш, осло эйәк, ас яңак — шул буҙ атты бирәйем.* М. Буранғолов.

**2.** *диал.* Ҡаҙыҡ теш (*кар.* **теш** [1] 1).

**АҘАУЛАНЫУ** *к. диал. кар.* **аҙыу** [1] 3. *Баратора Шәмсиәнең нәпсеһе бик аҙауланды.* К. Кинйәбулатова.

**АҘАШ** *и.* Бер исем йөрөткән ике йәки бер нисә кеше (бер-береһенә ҡарата). *Ана мәктәп директоры ла Зыя агай — минең аҙаш. Уның исемен онотмаһагыҙ, иҫкә төшөрһәгеҙ, минекен дә онотмаҫһыгыҙ.* М. Тажи.

**АҘАШТЫРЫЛЫУ** *к. төш. кар.* **аҙаштырыу.** *Аҙаштырылган бесәй.*

**АҘАШТЫРЫУ** *к.* **1.** Юлдан яҙҙырыу, яңылыш юлға төшөрөү. *Аҙаштырган болан балаһындай, яңгыҙ башым ситтә интегәм* (Халыҡ йырынан).

**2.** *күсм.* Яңылыш юлға баҫтырыу; хаталандырыу. *Караңгы ла төндә йөрөгәндә, аҙаштырмай ерҙең мижаһы. Аҙаштырмай ерҙең ай мижаһы, аҙаштыра донъя нужаһы* (Халыҡ йырынан).

**АҘАШЫУ** *к.* **1.** Юлдан яҙыу, юл юғалтыу. *[Асия:] Атайым менән калага килгәйнем, мин унан тороп калдым да аҙаштым.* К. Мәргән. *Арлы-бирле утын йыя һалып, кайтыр юлга сыкһа, әбей бик каты буранга осрап, аҙашкан, ти* (Әкиәттән).

**2.** Башҡаларҙан айырылып, яҙлығып ҡалыу. *Баш осонан яңгыҙ кыр өйрәге быжкылдап осоп китте. Бала өйрәк. Курәһең, өйөрөнән аҙашкандыр инде.* Б. Бикбай. / *күсм.* Яңылыш юлға баҫыу; хаталаныу. *Кешеләрҙең шат, өмөтлө моңһоу күҙҙәренә карап барамын: юлдарымда аҙашмаҫ өсөн, йырҙарымда алдашмаҫ өсөн.* М. Кәрим.

● *Айлы төн аҙашмаҫка якшы.* Әйтем. *Кайтып килеп өйөрөн тапһа, аҙашкан малды әрләмә.* Әйтем. *Яңгыҙ йөрөп һукмак ярганса, күп менән бергә аҙаш.* Әйтем.

**АҘБАР** *и.* Мал биклә͏й торған ябыулы кәртә; һарай. *Ат аҙбары. Һыйыр аҙбары.* ■ *Иртәгеһен иртәнсәк Сөйәлбайҙың атаһы Толпарҙы аҙбарҙан сыгарган* (Әкиәттән).

**АҘҒЫН** *с.* **1.** Ситтә йөрөргә әүәҫ; йөрөмтәл. *[Фәйзулла:] Аҙгын ат икән был колаң. Алдында әллә ни саклы бесәне була тороп, ем эҙләп киткән, булдыкһыҙ.* Ғ. Ғүмәр.

**2.** Әхлаҡ-тәртипкә күнмәгән; тыйнаҡһыҙ. *Мин Исмәгилдең төҙәлмәҫлек бер аҙгын бала булыуына ышанмайым.* Я. Вәлиев.

**3.** Енси яҡтан тотанаҡһыҙ; йөрөмтәл. *Аҙгын күңел.* ■ *[Үмәр:] Ике донъяла изгелек күрмәгер, аҙгын кыҙ! Уф алла!* Һ. Дәүләтшина.

**4.** Төрлө тоҡом ҡатнашып, үҙ тоҡомон юғалтҡан (малға ҡарата).

**5.** Тиҙ боҙолоусан, бәләкәй генә яранан да боҙолоп китеүсән (тәнгә ҡарата).— *Тәнең аҙгын икән, шырау ингәнгә генә калай боҙолоп киткән.*

● *Ат аҙгыны тайга әйәрер.* Әйтем.

**АҘҒЫНЛАНЫУ** *к.* **1.** Тәртипһеҙгә, әхлаҡһыҙға әйләнеү; тыйнаҡһыҙланыу.

**2.** Енси яҡтан тотанаҡһыҙланыу; боҙолоу, аҙыу.

**АҘҒЫНЛАУ** *к. диал. кар.* **аҙыу** [2] 4, 5. *Яра аҙгынланган.* ■ *Быйыл сәскән бойҙай аҙгынлаган.* М. Ҡулаев.

**АҘҒЫНЛЫҠ** *и.* Әхләки боҙоҡлоҡ, күңел боҙоҡлоғо.

**АҘҒЫНТЫҠ** *с. диал. кар.* **аҙғын** 1.

**АҘҒЫР** *с. диал. кар.* **аҙман** [1].

**АҘҘЫРЫУ** *к.* **1.** Аҙғынлыҡ юлына, әхлаҡһыҙлыҡҡа төшөрөү; боҙоу. *Борон заманда аҙмаганды аҙҙырып, туҙмаганды туҙҙырып йөрөгән бер Мәскәй булган, ти* (Әкиәттән).

**2.** Ауырыуҙы, яраны ваҡытында дауаламай шаштырыу. *Элек ни, бер ер кыркылһа, көл һалып, яра ташы кырып, аҙҙырып йөрөгәнбеҙ икән.* С. Агиш.

♦ **Башын** (*йәки* **күңелен**) **аҙҙырыу** боҙоҡлоҡҡа төшөрөү, аҙғынлыҡ юлына баҫтырыу. *[Гөлмәрфуга:] Әлеге шул сибәрлеге, аҫыл теле менән күңелемде аҙҙырҙы.* Д. Исламов.

● *Яман юлдаш аҙҙырыр, якшы юлдан яҙҙырыр.* Әйтем.

**АҘЛАП** *р.* Бәләкәй-бәләкәй өлөштәр менән; киреһе күпләп. *Сәлимә тәүге иренән калган барлы-юклы малын аҙлап үрсетеп, тырышып балаларын тәрбиәләне.* Һ. Дәүләтшина.

**АҘ-МАҘ** *р.* Аҙ ғына, саҡ ҡына; бер аҙ, әҙмәҙ. *Өмөтбай .. иң тәүҙә туҙҙырылган донъяһын аҙ-маҙ төҙәтеп, ат, һыйыр алып, крәҫтиән эше менән шөгөлләнмәксе ине.* Ғ. Дәүләтшин. *Иртәнсәк кәләше, Янһарының билен быуып, битенә аҙ-маҙ тупрак һөртә лә, әлеге этте эйәртеп, батшага ебәрә* (Әкиәттән).

**АҘМАН** [1] *и.* Эре һағыҙаҡ. *Аҙмандар, гәҙәттә, парлап кына ергә сокоп яһаган ояла йәшәй.* Б. Бикбай.

**АҘМАН** [2] *с.* **1.** Өйҙә тормай, аҙып-туҙып йөрөүсән. *[Кунакбикә:] Йә, аҙман, кайҙа йөрөнөң? Көнө буйы өйҙә тормайһың, мөхәббәтһеҙ.* Д. Юлтый./Тыуған иленән аҙып сығып киткән. *Аҙман кеше.*

**2.** Төрлө тоҡом ҡатнашҡандан килеп сыҡҡан (малға ҡарата). *Аҙман эт.*

**3.** *диал. кар.* **аҙғын 5.** *Тәне бик аҙман.*

**АҘМЫ-КҮПМЕ** *р.* Вер ни тиклем, бер аҙ. *Ауыл хужалыгын күтәреүҙә аҙмы-күпме эш эшләнелә.* Ғ. Хисмәти. *Гөлйөҙөм йәйләүгә килгәс, Мәгфүрә үҙен аҙмы-күпме иркендә хис итеп, иркен тын алып калгандай бул[ды].* Һ. Дәүләтшина.

**АҘНА** *[фарс.] и.* Дүшәмбенән алып йәкшәмбегә тиклемге ете көндө эсенә алған ваҡыт. *Аҙна буйы. Аҙна һайын. Аҙна аҙагы. Аҙна башы.* ■ *Буҙансы ай үҫәһен көн үҫеп, йыл үҫәһен аҙна үҫеп, ҙурайып киткән* (Әкиәттән)./Ете көндән торған ваҡыт берәмеге. *Шулай бер нисә аҙна үткәс, Акназар капыл аҙ-аҙлап ауыҙына аш ала башлай* (Әкиәттән).

♦ **Йылан аҙнаһы** *һөйл.* 16 август менән 20 август араһы. **Урыҫ аҙнаһы** *һөйл.* йәкшәмбе. *Бөгөн генә йома, иртән шәмбе, береһе көнгә урыҫ аҙнаһы. Көндәр юрта шулай бер-бер артлы, аҫыла-ябыла гүмер капкаһы.* Ғ. Амантай.

**АҘНАЛАП** *р.* Аҙна-аҙнаһы менән. *Аҙналап эшләү.*/Аҙна буйы. *Аҙналап кунак булыу.*

**АҘНАЛЫҠ** [1] *с.* **1.** Аҙна буйына дауам иткән. *Шул ваҡыт мин кырҙа инем, кырҙа ине бар халыҡ. Аҙналыҡ эштән бушағас, ята инек хәл алып.* Ғ. Ғүмәр.

**2.** Аҙнаһына бер була торған, аҙна һайын ҡабатланып торған. *Аҙналыҡ журнал.* ■ *1925 йылдың 27 мартынан башлап башҡорт телендә аҙналыҡ .. «Башҡортостан йәштәре» газетаһы сыға башланы.* Т. Йәнәби.

● *Бер көнлөк юлға сыкһаң, аҙналыҡ аҙыҡ ал.* Мәҡәл.

**АҘНАЛЫҠ** [2] *и.* Берәй ваҡиғаға, эшкә бағышлап үткәрелгән аҙна. *Китап аҙналығы. Музыка аҙналығы. Әҙәбиәт аҙналығы.* ■ *Яланға сығасаҡ машиналарға һынау, тикшереү аҙналығы үткәрелде.* Ф. Исәнғолов.

**АҘНАУ** *к. диал. кар.* **айғылдау** 1.

● *Аҙнаған айғырҙы өйөрҙә һына.* Мәҡәл.

**АҘРА** [1] *[гәр.] с. иҫк.* Юҡҡа сыҡҡан, ҡороған. *Күгәреп ятҡан күк арҡа, мал төйәге туғайың — аҙра ҡалыр малдан һуң* (Ҡобайырҙан).

■ **Аҙра итеү** юҡ итеү; юҡҡа сығарыу. *Ҡараһаҡал батыр ҙа артҡа сикмәй нишләһен? Тарҡауланғас батырҙар, ил ҡалдырып дошманға аҙра итмәй нишләһен?* «Ҡараһаҡал».

**АҘРА** [2] *и. диал. кар.* **ҡаулан** [1].

**АҘРАТ** *и. иҫк.* Ҡая тау, ҡатланып ятҡан таш.

**АҘСЫЛЫҠ** *и.* Берәй төркөмдөң һан яғынан кәм булған өлөшө. *Береңде икенсең иҙеү принцибына ҡоролған синфи тормош шарттарында .. күпселек яфа сигә, аҙсылыҡ рәхәт йәшәй.* Ә. Харисов.

**АҘҺЫНЫУ** *к.* Берәй нәмәнең күләмен, һанын аҙ күреү; аҙға һанау. *Етмәй бесән, етмәй емеш уға [Ғәззәгә], етмәй һаҙлыҡтарҙың мүктәре. Аҙһына ул, көн дә утыҙ литр һөт бирһә лә ҡыҙыл мүкләге.* Т. Арслан.

**АҘЫҠ** *и.* **1.** Туҡланыуға файҙаланылған нәмә; ашамлыҡ, ризыҡ. *Аҙыҡ магазины. Аҙыҡ промышленносы.* ■ *Ҡәмән менән Сәмән шыр бешәлек араһына инеп, төйөнсөктәге аҙыҡты ашап бөтөргән* (Әкиәттән). **Ҡара аҙыҡ** һөтҡатыҡһыҙ, бер төрлөрәк аҙыҡ./Хайуандар туҡлана торған бөтә нәмә. *Йәшел аҙыҡ. Минераль аҙыҡ. Ҡатнаш аҙыҡ. Тамыр аҙыҡ. Аҙыҡ рационы. Мал аҙығы.* ■ *Аҡ уҫаҡҡайҙарҙың ай ҡабығы — аҡ ҡуянҡайҙарҙың аҙығы* (Халыҡ йырынан).

**2.** *күсм.* Күңелде ҡәнәғәтләндерерлек нәмә. *Рухи аҙыҡ. Күңел аҙығы.*

◆ **Кейәү аҙығы** *кар.* **кейәү.**

● *Аҙыҡлының аты арымаҫ.* Әйтем. *Көнлөк аҙыҡ ҡорһаҡта, айлыҡ аҙыҡ арҡала.* Әйтем. *Яҡшы һүҙ — йән аҙығы, яман һүҙ — баш ҡаҙығы.* Мәҡәл.

**АҘЫҠЛАНДЫРЫЛЫУ** *к. төш. кар.* **аҙыҡландырыу.**

**АҘЫҠЛАНДЫРЫУ** *к.* **1.** Организмға туҡлыҡлы матдә биреү. *Яһалма юл менән аҙыҡландырыу.*

**2.** Тупраҡҡа ашлама индереү; ашлау. *Өҫтән аҙыҡландырыу өсөн төрлө минераль һәм органик ашлама файҙаланыла.*

**АҘЫҠЛАНЫУ** *к.* **1.** Аҙыҡ ҡабул итеү; ашау. *Егет шунда сәй ҡайнатып, ит бешереп аҙыҡланған булған, һыйланған.* Б. Вәлит.

**2.** Тереклек итеү өсөн кәрәкле матдәләрҙе үҙләштереү; туҡланыу. *Үҫемлек тамыры, һабағы һәм япрағы ярҙамында аҙыҡлана.*

**АҘЫҠ-ТҮЛЕК** *и. йыйн.* Кешегә ашарға яраған бөтә ашамлыҡ; ризыҡ. .. *йыл әйләнәһенә уның ите, майы һәм башҡа аҙыҡ-түлеге өҙөлмәй.* В. Бикбай. *[Әбей улына:] Илгә сығып өҫбашыңды аҙыраҡ бөтәйтеп, әҙ булһа ла аҙыҡ-түлек алып ҡайтыу яғын ҡарар инең* (Әкиәттән).

**АҘЫЛМА** *с. диал.* Ҡалҡыулы, түбәле (ергә ҡарата).

**АҘЫМ** *и.* **1.** Атлағандағы аяҡ менән аяҡ араһы. *Алымлы аҙым. Ваҡ аҙым. Эре аҙым. Аҙымды йышайтыу.* ■ *[Әбей] бер нисә аҙым атланы ла Сәгиҙәгә боролдо.* М. Тажи.

**2.** Атлағандағы ике аяҡ араһына тиң оҙонлоҡ үлсәү берәмеге. *Бер аҙым. Ике аҙым ер.*

**3.** Атлап барыш, йөрөш. *Ҡыҙыу аҙым. Һәлмәк аҙым.* ■ *Кире боролорға ауыл йыраҡ. Тукал аҙымы менән тағы бер төн ҡайтырға кәрәк.* Х. Ғиләжев. *Ярцевтың йөрөшө бик мөһабәт .. Үҙенә нык ышанған кешеләрҙә генә була торған эре, һәлмәк аҙым менән атлай.* К. Мәргән.

**4.** *күсм.* Берәй эшкә йүнәлтелгән ынтылыш; хәрәкәт. *Ҡыйыу аҙым. Тәүге аҙым.* ■ *Ячейканы һәр кем таныны. Егеттәрҙең түгел, ҡыҙҙарҙың да ячейкаға табан аҙымы.* Ғ. Хәйри.

◆ **Аҙым һайын** әленән-әле, гел генә. *Аҙым һайын гәйебең асылыуын көтөп, ҡурҡып йәшәгәнсә, арығанса эшләп, барыһын да онотоп, тыныс йоҡлауыңа ни етә.* Б. Бикбай. **Бер аҙым** да саҡ ҡына ла, бер ҙә. *Эт арттан бер аҙым да ҡалмай.* М. Тажи.

**АҘЫМЛАУ** *к.* Аҙым менән билдәләү, аҙымға һалыу. *[Ниязгол] тағы йәһәт атлап, залды мөйөштән мөйөшкә аҙымлап үлсәй башланы.* Һ. Дәүләтшина. / Киң баҫып атлау. *Ҡайһы бер урам сатында өс-дүрт кешелек патруль ҡыҙылармеецтар осрай. Улар ашыҡмай.. һалмаҡ ҡына аҙымлай.* А. Таһиров.

**АҘЫМЛЫ** *с.* Аҙымы эре, ырамлы, шәп атлай торған; йөрөшлө (атҡа ҡарата).

**АҘЫМТЫҠ** *с. диал. кар.* **аҙғын** 1—3. *Эюповтың йыйын туҙға яҙмаған һүҙҙәренән эшнәләре екһенеп бөттө, ахыры. «Күп һөйләнәһең, аҙымтыҡ»,— тип туҡтаттылар уны.* Ғ. Ибраһимов.

**АҘЫП-ТУҘЫУ** *к.* **1.** Бер ерҙә ныҡлап тормай, ерекмәй, күсенеп йөрөү.

**2.** Аҙғынлыҡ юлына баҫыу. *«Үҙеңә бәхетле юл теләйем,— тине председатель,— тик ҡара уны, аҙып-туҙып китмә, тыуған ауылыңа тап төшөрмә»* Д. Исламов.

**АҘЫРАЙЫУ** *к. кар.* **ажрайыу.**

**АҘЫРАҠ** *р.* Бер аҙ, бер ни тиклем. *Мин сакырҙым, һин килмәнең, аҙырак йәне көйһөн, тип* (Халыҡ йырынан).

**АҘЫРТЫУ** *к. һир.* Аҙып, боҙолоп китеү (тәнгә ҡарата). *Енсек тиреһе аҙыртып ҡыҙарып тора.* М. Ҡулаев.

**АҘЫУ** [1] *к.* **1.** Өйҙә тормай, ауыл араһында, ситтә йөрөү (кешегә, малға ҡарата). *[Батша:]*

*Минең ун һыйырым бар ине. Шулар, бына йыл тула инде, курага кайтмай, мөстәнләнеп аҙып йөрөй* (Әкиәттән)./Бер ергә лә ерекмәй, төрлө ерҙә йөрөү. *Мин илдән аҙган бер етем. Өсөнсө көн инде шыр урманда юл таба алмай йөрөп интектем.* Б. Вәлит.

**2.** Әхлаҡ-тәртип ҡағиҙәләреи тотмау, тәртипһеҙгә әйләнеү; боҙолоу.— *Эй гүмеркәйҙәр, ахыры заман якындыр инде. Шулай булмаһа, халык был тиклем аҙмаҫ ине,— тип зарланырга тотондо [кортка].* Т. Йәнәби.

**3.** Енси яҡтаи тәртипһеҙләиеү; боҙолоу.

**4.** Ҡатнашып, тоҡом яғынан боҙолоу (малға ҡарата).

**5.** Көсәйеп, шашып китеү (ауырыуға ҡарата). *Грипп менән ауырыганда йөрөһәң, ул аҙа.*

**6.** Боҙолоп шешеп китеү (тәнгә ҡарата).— *Бынау бала тубыгын ташка һыҙыргайны, аҙган да киткән.*

**7.** *диал.* Хыялый булыу.

♦ **Баш аҙыу** дөрөҫ йәшәү ҡағиҙәләрен тотмау, ҡылығы насарға әйләнеү, тәртнпһеҙләнеү. **Бәйел аҙыу** нык тыйнаҡһыҙланыу, холоҡһоҙланыу.

● *Айырылган ир аҙыр, кушылган ир уҙыр.* Мәкәл. *Бәйелең аҙмай, башка бәлә килмәй.* Мәкәл. *Кәңәшле ил аҙмаҫ.* Әйтем.

**АҘЫУ** [2] *и. диал. кар.* **аҙау** [5].

● *Боҙ өҫтөндә яҙыу тормаҫ, карт кешелә аҙыу тормаҫ.* Әйтем.

**АЖАҒАН** *и. диал. кар.* **ялағай** [1].

● *Ажаган ашлык бешерә.* Әйтем.

**АЖАР** *и.* **1.** Ташып барған көс, ғәйрәт; алҡынып торған дәрт; айбар. *Әле уйлайым, әгәр йөрәктә шундай ажар, сәм булмаһа, тәүге йылдагы ауыр шарттарга мин сыҙай алмаган, кире сигенгән булыр инем, могайын.* З. Бнишева. **Ажар ҡайтыу** дәрт һүнеү, көс кәмеү. *[Ирҙәрҙең] ажарҙары кайткан. Әйтер булһа хак һүҙ һәм асыуҙы байҙарга; һакта әҙер торган бәләсәйҙәр кылыс, камсы менән йайларга.* С. Кулибай. **Ажарын алыу** (*йәки* **ҡайтарыу**) дәртен баҫыу, көсөн алыу.

**2.** Кешенең ҡотон алып, ярһып торған асыу; айбар. *Ажар күрһәтеү.* ■ *[Хәбибә инәй:] Күп вакыттар үткәс, яу ажарҙары һил булгас, халык ошо Ослоташ тауы моронона йорт һалып тора башлаган.* Б. Бикбай.

**АЖАРЛАНЫУ** *к.* Ғәйрәт сәсеп ярһыу; айбарлаиыу. *Урталагы ажарланып елгән кара күк айгыр әллә кайҙан үк бының Ниязгол повозкаһы икәнен күрһәтә ине.* Һ. Дәүләтшина./Ярһып, ҡотто алып ажғырыу. *Коро дала. Уны зыр кыҙырып, ажарланып елдәр һыҙгыра.* А. Игебаев.

**АЖАРЛЫ** *с.* **1.** Көсө, дәрте урғылып торған; ярһыу. *Күргәнем бар минең аякһыҙҙар бейегәнен .. еңеү көнөндә. Эй ул бейеү! Ул ажарлы бейеү күҙ алдымдан китмәй бөгөн дә.* Р. Сафин.

**2.** Ажғырып торған ҡурҡыныс ҡиәфәтле. *Ажарлы йылан. Ажарлы эт.*

**АЖАРЛЫҠ** *и.* Ташып барған көс, ярһыулыҡ. *Күк болонда күк аргымак йөрөй утлап. Бәкәлендә корос быгау бөткән тутлап. Ауыр, ауыр ул быгауҙы һөйрәтеүе, ажарлыкта гел түҙергә өйрәтеүе.* Ә. Әхмәткужнн.

**АЖАУ** *и.* Һаҙандар төркөмөнә иигән, яҫы мороило, итләс эре балыҡ; ҡушбаш. *Ул [Зөбәйҙә] кармагын яр башына ыргытып өлгөргән. Унда ярты аршындай ажау тыпырсынып ята.* Н. Мусин.

**АЖҒЫР** *с. диал.* Ыҙғар.

**АЖҒЫРЫНЫУ** *к.* Ҡурҡытырлыҡ тауыш сығарыу. *Азамат ажгырынган айгырҙан әҙ генә ситтәрәк тын да алмай ергә һеңешеп ятты.* Й. Мостафии.

**АЖҒЫРЫУ** *к.* **1.** Зәһәр сәсеп, ярһып кешегә екереү. *Ебәр!.. Мин һеҙҙе өйрәтермен әле! — тип ажгырҙы хулиган.* Р. Солтаигәрәев./Ҡурҡыныс итеп ҡысҡырыу. *Айыу ажгырып ситкә ыргыган.* Н. Мусин. *Аждаһа ажгырып Килтәймәргәнгә ташланган* (Әкиәттән).

**2.** *күсм.* Яман тауыш сығарып, ҡотороноп шаулау. *Атылган туптың снаряды ажгырып килә лә, урмандамы, ауыл ситендәме ярыла, ерҙе тетрәтә.* А. Таһиров. *Капыл көслө ел сыга, тулкындар урә тора, ажгырып ярга ынтыла.* Ә. Вахитов.

**АЖДАҺА** [*фарс.*] *и.* **1.** Бер нисә башлы ҙур йылан ҡиәфәтендәге йөҙ йәшәр мифик зат. *Башкорт мифологияһында һөйләнеүенсә, йөҙ йыл буйына кеше күҙенә күренмәй йәшәгән йылан аждаһага әүерелә.* Ә. Харисов. *Күлдә бер аждаһа бар икән. Етегә уралып ята, ти, был аждаһа* (Әкиәттән).

**2.** *күсм.* Уҫал, йырткыс кешегә ҡарата әйтелә. *Ер шарын урап, һырып алган аждаһалар, палач-газраилдар.* Ғ. Хәйри.

♦ **Аждаһа йылы** ун ике йыллыҡ мөсәлдең бишенсе йылы. **Аждаһа күтәрелеү** ырым буйынса, көслө ҡойондан күл, йылғаның һыуы өйрөлөп күккә ауалағанды әйтәләр. *Алайгыр ташы ауылыбыҙҙың тирәһендәге иң бейек кая. Уның аҫтындагы ятыуҙың төбөнән касандыр аждаһа күтәрелгән, тип һөйләйҙәр.* Д. Бураҡаев.

**АЖРАЙЫУ** *к.* **1.** Асыуланып, күҙҙе аҡайтыу. *Нимә ажрайып тораһың, ни асыуың бар миндә?*

**2.** *күсм.* Эреләнеү, ҡупырайыу. *Батый хан да уҙган юл, олатайың Шәгәле ажрайып йөрөгән юл!* «Юлай менән Салауат».

● *Акылы юк кешенең ажрайган күҙе бар.* Әйтем.

**АЖЫР-БОЖОР** *с. диал.* Суғырмаҡлы.

**АЖЫРЫЙ** *с. диал.* **1.** Аҡыш. *Ажырый күҙ.*

**2.** *күсм.* Бик эре, һауалы (кешегә ҡарата).

**АЗАМАТ** *и.* **1.** *кар.* **аҙамат.**

**2.** *(баш хәреф менән)* Ир-ат исеме.

**АЗАТ** [*фарс.*] *с.* **1.** Үҙ ихтыярлы, ирекле; бойондороҡһоҙ. *Азат ил. Азат халык.* ■ *Әмин инде һеҙҙең менән йөрөргә булдым бергә. Шатлыгын азат хеҙмәттең һөйләп йөрөрмөн һеҙгә.* Р. Ниғмәти.

**2.** Вушатылған, буш. *Башка эштән азат ителгән махсус секретарь.*

**3.** *(баш хәреф менән)* Ир-ат исеме.

□ **Азат булыу** тотҡондан, бойондороҡтан ҡотолоу, ирекка сығыу. **Азат итеү** (*йәки* **ҡылыу**) тотҡондан, бойондороҡтан ҡотҡарыу; ирекле итеү. *Дошмандан азат итеү. Төрмәнән азат итеү.* ■ *«Мин, аҙамат» һине азат кылам,— тине [Кусәк*

*батыр].— Ҡайҙа барһаң, бынан тыш бәхетең артыр.* «Бабсаҡ меиән Күсәк».

**АЗАТЛЫҠ** *и.* Ирек, бойондороҡһоҙлоҡ. *Азатлыҡ хәрәкәте. Милли азатлыҡ. Азатлыҡ өсөн көрәш.* ■ *Миндә лә бит кешелек намыҫы бар, мин азатлыҡ теләйем,* әсәм. Ғ. Амантай.

**А́ЗБУКА** [*рус.*] *и.* **1.** *кар.* **алфавит.**

**2.** *кар.* **әлифба.** *Айбулаттың шатлыҡтан тыны ҡурылды. Азбуканы ҡушҡуллап ҡуҡрәгенә ҡыҫты.* Һ. Дәүләтшина.

**АЗЕРБАЙЖАН** *и. кар.* **әзербайжан.**

**А́ЗИМУТ** [*рус.* ⟨ *фр.* ⟨ *ғәр.*] *и.* **1.** *астр.* Меридиан яҫылығы менән берәй күк есеме йәки күҙәтелгән нәмә аша үткән вертикаль яҫылыҡ араһындағы мөйөш. *Азимутты билдәләү. Азимут менән барыу.*

**2.** Кәрәкле йүнәлеш менән төнъяҡ йүнәлеше араһындағы мөйөш.

**АЗО́Т** [*рус.* ⟨ *гр.*] *и.* Химик элемент, янмай торған төҫһөҙ, еҫһеҙ газ. **Азот кислотаһы** тәнде яндыра, ағыулай торған еҫһеҙ, төҫһөҙ шыйыҡлыҡ.

**АЗОТЛАУ** *ҡ.* Азотҡа байытыу. *Тупраҡты азотлау.*

**АЗОТЛЫ** *с.* Азот ҡатышҡан, составында азот булған. *Азотлы ашлама.*

**АЙ**[1] *и.* **1.** Ер тирәһендә әйләнгән иң яҡын күк есеме, Ерҙең әйәрсене. *Иҫке ай. Тулған ай. Тыуған ай. Яңы ай. Ярты ай. Ай нуры. Ай яҡтыһы.* ■ *Ай ҙа, Ер кеүек, шар рәүешендә, ләкин ул Ерҙән 29 тапҡыр бәләкәйерәк.* «Совет Башҡортостаны», 1969, 25 ноябрь.

**2.** Шул есемдең ураҡ рәүешендә ҡабул ителгән билдәһе. *Мәсет айы.*

**3.** Йылды ун ике өлөшкә бүлгән ваҡыт берәмеге. *Ай аҙағы. Ай араһы. Ай башы. Йәй айҙары. Ҡыш айҙары.* ■ *Беҙҙе һығышҡа кереттеләр гинуар айы еткәндә. Йөрәктәрем дерт-дерт итте, туптар ярылып киткәндә* (Бәйеттән). **Кәкүк айы** кәкүк башлап саҡырған ай, май айы. *Сахрала кәкүк ай саҡыра ҡарағайҙин бейек ҡайында. Илама ла, атай, илама, әсәй, беҙ ҡайтырбыҙ кәкүк айында* (Халыҡ йырыиан). **Сомтор ай** февраль айы./Утыҙ көндән торған ваҡыт берәмеге. *Көндәрҙән бер көн, Бабсаҡтың, үлтерелеүенә ете ай тулғанда, Йәмиләнән бер ир бала тыуа.* «Бабсаҡ менән Күсәк».

◆ **Ай битен йыуа** яңы ай тыуғас яуған ямғырға ҡарата әйтелә. **Ай ҙа ҡояш булыу** һәр саҡ көләп, йылмайып ҡына тороу. *Бөтә кешегә ай ҙа ҡояш булып булмай.* **Айҙы күккә сығарыу** файҙаһыҙға тырышҡан кешегә ҡарата әйтелә.— *Йығылһам, йығылдым, айҙы күккә сығарҙым тигәндәй, Ниязғолдоң ауыртҡан еренән тотоп ҡыҫҡырттым әле.* Һ. Дәүләтшина. **Ай күрҙе, ҡояш алды** күҙ алдынан ҡапыл юҡ булған кешегә ҡарата әйтелә. **Ай кәртәләнеү** ай тирәһендә нурлы ҡулса барлыҡҡа килеү. *Ай кәртәләнһә, көн йонсоу була* Һынамыш. **Ай ҡолаҡланыу** айҙың ике яғынан оҙон ҡолаҡ кеүек нур барлыҡҡа килеү. *Өйгә инеп барғанда, Биктимерҙең күҙе айға төштө: — Ай ҡолаҡланған икән, иртәгә бик һыуыҡ, йә бик шәп буран булыр, ахыры,— тип уйланы ул.* Б. Ишемғол. **Ай ҡоро** (йәки **кәртәһе**) айҙы уратып торған яҡтылыҡ. **Ай тотолоу** Айҙың Ер күләгәһенә инеп ҡараңғыланыуынан торған астрономик күренеш.

● *Ат айҙа һыналыр, әҙәм йылда һыналыр.* Әйтем.

**АЙ**[2] *ымл.* **1.** Ҡапыл ҡурҡҡанда, тертләгәндә әйтелә. *«Ай» — Сәгиҙә баланы күтәреп торғоҙҙо. Ә Хафиз ҡарт: «Ҡурҡма, ҡурҡма, ҡыҙым, бер ни ҙә булмаҫ»,— тине.* М. Тажи.

**2.** Әсенеү, һыҙланыу-һыҡраныуҙы белдергәндә әйтелә. *Ай, бер генә йотом һыу булһасы.* М. Тажи. **Ай әттәгенәһе** үкенес белдергәндә әйтелә. *[Ныязғол:] Ай әттәгенәһе,.. буран сығып бөлдөрҙө лә баһа.* Һ. Дәүләтшина.

**3.** Асыуланып, ризаһыҙлыҡты белдергәндә әйтелә.— *Ай, аптыраттың да баһа!* И. Насыри.

**4.** Ҡыуаныу, һоҡланыу һ. б. тойғоларҙы белдергәндә әйтелә.— *Ай, шәп булыр инеI* Ғ. Әмири.— *Ай, минең бәләкәсем!* Һ. Дәүләтшина. *Ай, ҡыҙҙары, ҡыҙҙары ла, янып тора күҙҙәре* (Халыҡ йырынан).

**5.** Йырҙарҙа, ҡобайырҙарҙа тойғоно көсәйтеү һәм шиғыр үлсәмен теүәлләү өсөн ҡулланыла. *Агиҙелкәй ҡайҙа, ай тигайҙа, Агиҙелкәй кеүек һыу ҡайҙа. Агиҙелкәйҙәрҙең ай һауаһы йәнгә рәхәт, тенгә ҙур файҙа* (Халыҡ йырынан).

**АЙ-АЙ** *ымл.* **1.** Аптырағанда әйтелә. *[Пётр:] Ай-ай, нишләп был яҡҡа килеп сыҡтығыҙ һуң.* М. Тажи.

**2.** Ауыртҡанда әйтелә. *[Ғатаулла:] Ай-ай, билем, билем... Ҡартлыҡ баҫты, ахыры.* Ғ. Әмири.

**3.** Киҫәткәндә, тыйғанда әйтелә. *Ай-ай! Сынаяҡҡа теймә, төшөрөп ебәрерһең.*

**АЙБАҒАР** *и. диал.* Көнбағыш.

**АЙ-БАЙ, ай-бай-бай** *ымл.* Берәй эш-хәлгә ғәжәпләнгәндә әйтелә. *[Нужа:] Ай-бай, Сәлимйән ҡусты, һинең эштәр көйлө икән* (Әкиәттән).

**АЙБАЙЛАУ** *ҡ.* Ярҙамға саҡырып, һөрән һалыу. *Айбайлап ҡысҡырыу.*

**АЙБАЛТА** *и.* Ҙур түңәрәк йөҙлө, оҙон һаплы боронғо һуғыш ҡоралы. *Ике ишекте ҡулдарына айбалта тотҡан икешәр егет һаҡлап тора.* Х. Ғәбитов. *Һушынан яҙған батшаның башын түмәргә һалалар. Баш киҫеүсегә айбалта тотторалар* (Әкиәттән).

**АЙБАЛЫҠ** *и.* Кәүҙәһе ян-яҡтан ныҡ ялпаҡ, ҡойроҡһоҙ эре диңгеҙ балығы.

**АЙБАНЫУ** *ҡ.* Алдан ҡурҡып, хәүефләнеп тороу. *Айбанһа дошман яуынан, Уралға ул булырмы?* «Ҡараһаҡал»./*диал.* Ҡурҡып һиҫкәнеү. *Ас бүреләр кеүек килгән әҙәмдәрҙе шәйләп, айбанып киткән Михайланың һикереп торғаны күренде.* Ғ. Ибраһимов.

**АЙБАР** *и.* **1.** Ташып торған көс; ғәйрәт, ажар. *Бөтәһе лә шау килеп Салауатҡа эйәргәс, халыҡтың айбарын күргәс, Юлай ҡарыулашмаған.* «Юлай менән Салауат».

**2.** Ҡотто алып, ярһып торған асыу; ажар. *Айбар менән.*

◆ **Айбар ҡороу** ҡурҡытыу. **Айбар һалыу** ғәйрәт сәсеп, ҡурҡыныс һалыу. *Дошман күрһә, альямаҫ, дошманына айбар һалыр — таянырға иле бар.* М. Буранғолов.

**АЙБАРЛАНЫУ** *к.* **1.** Ярһып, көс, ғәйрәт сәсеү. *Эй каһарман егет, батыр егет, кыуа-кыуа дошман яуҙарын, тап арыҫлан һымак айбарланып, йырып сыктың Урал тауҙарын.* М. Ғафури.

**2.** Ҡурҡытырға тырышып екереү. *Офицер кабатлата унан һалдат антын һәм айбарлана аяк тибеп.* М. Тажи.

**АЙБАРЛАУ** *к. кар.* **айбарланыу** 1. *Ябырылып яу килгәндең һөйәге калган Урал тау, айбарлаган батырҙарҙың төйәге булган Урал тау* (Ҡобайырҙан).

**АЙБАРЛЫ** *с.* Көсө, дәрте алҡынып торған; ғәйрәтле, ажарлы. *Айбарлы егеттәр.* ■ *Айбарлы ла ирҙәр бар сагында, баҙына алмаҫ дошман илемә* (Халыҡ йырынан).

**АЙ-БУЙ** *ымл.* Берәй эш-хәлгә аптырағанда әйтелә. *[Карт:] Ай-буй, бүстәк булып сыкты ла баһа был нәмә.* Б. Бикбай.

**АЙВА** *и.* **1.** Роза сәскәлеләр ғаиләһенә ҡараған, емеше алмаға оҡшап торған көньяҡ ағасы. *Айва агасы. Айва сәскәһе.*

**2.** Шул ағастың емеше. *Айва вареньеһы.*

**АЙ-ВАЙ** *ымл.* Ҡайғы-хәсрәттән әрнеп йәки нимәнәндер риза булмай өҙгөләнгәндә әйтелә. *Ай-вай итеү. Ай-вай килеү.*

♦ **Ай-вайға ҡуймау** бер-берәүҙең ризаһыҙлығын иҫәпкә алмау. *Халык батшаны ай-вайына куймай атка мендереп ултырта* (Әкиәттән).

**АЙВАЙЛАУ** *к.* Ҡайғы-хәсрәт йәки һыҙланыу белдереп өҙгөләнеү; ай-вай итеү. *Айвайлап илау.*

**АЙҒАҘАУ** *к.* **1.** Йайлап, иркенләп йөрөү. *Уны йомошка ебәрһәң дә айгаҙай ҙа йөрөй, һис бер ашыга белмәй.* Һ. Дәүләтшина.

**2.** Ҡул-аяҡты ян-яҡҡа ташлап, иркенләп ятыу. *Эт кояш йылыһына айгаҙап ята.* Т. Морат.

**АЙҒАЛАҠЛАУ** *к.* Кейек ҡыуғанда, бер был яғынан, бер теге яғынан сығып, ҡыҫырыҡлау. *Эт куянды айгалаклай.*

**АЙҒОЛАҠ** *и.* Балыҡтың тын алыу ағзаһы. *Кәбир балыктың айголагынан эләктереп алды.* Я. Вәлиев.

**АЙҒЫЛДАУ** *к.* **1.** Ярһып, көслө тауыш биреү. *Айгыр айгылдап кешнәп ебәрҙе.* Ғ. Ибраһимов.

**2.** *күсм.* Көслө, көр тауыш һалыу. *Айгылдап көлөү.*

**АЙҒЫР** *и.* Беселмегән йылҡы малы. *Өйөр айгыры. Током айгыры. Аҫау айгыр.//Айгыр колон.* ■ *Егет кара туры айгырҙы һугарырга алып киткән* (Әкиәттән). **Айғыр һөрөүе** айғырҙың бейәләрҙе ҡыуып йөрөтөүе.

♦ **Айғыр үгеҙ** тоҡом үгеҙе. **Айғырға ятыу** тороғоу.

● *Атың булһа айгыр, ят та кайгыр.* Мәҡәл.

**АЙҒЫРЛАНЫУ** *к.* **1.** Айғыр һымаҡ ҡыланыу.

**2.** *күсм. һөйл.* Шашынып, ҡатын-ҡыҙға бәйләнеү.

● *Ат айгырланһа, башына була.* Әйтем.

**АЙҒЫРСАҠ** *с. диал.* Ата енесле, беселмәгән. *Айгырсак колон.*

**АЙҒЫРТАШ** *и.* Таш ырғытып уйнағанда иң ҙур таш (айғыр итеп уйнатыла).

**АЙҘА** *и. иҫк.* Айбалта. *Миңлегөл дә ир һымак, һаҙак алып кулына, айҙа тагып биленә, .. төштө улар юлына. „Караһакал“.*

**АЙҘАҠАЙ** *с. диал.* Аумаҡай.

**АЙҘАР** *и.* **1.** Түбәлә ҡырҡмай ҡалдырылған бер шәлкем сәс (ғәҙәттә малайҙарҙа).

**2.** *күсм.* Маҡтаулы исем, юғары дәрәжә билдәһе. *Куш айҙарлы мырҙалар ялсылай торор малдан һуң* (Ҡобайырҙан).

**3.** *(баш хәреф менән)* Ир-ат исеме.

**АЙҘАҪ** *с. диал.* Боролмалы.

**АЙҘАҺАР** *и.* Тулы айҙың түңәрәге. *Айҙаһар кеүек икмәк.*

**АЙҘЫНЛЫ** *с.* Яҡты, матур. *Башкорт йортоноң айҙынлы теләктәр менән янган йәш батырҙары яңы тәртип урынлаштырмаксылар.* Ш. Шәһәр.

**АЙҘЫР** *и.* **1.** Көлтә арбаһы.

**2.** *диал.* Оҙон арба.

**АЙКӘ** *ымл. диал.* Абау. *Айкә генә! Кара әле, калай мәрәкә.* Т. Морат.

**АЙҠАЛАУ** *к.* Ҡарап сығыу, байҡау. *Тирә-якты айкалау.*

**АЙҠАЛАШЫУ** *к.* **1.** Бирешмәҫкә тырышып, тартҡылашыу; көрмәкләшеү. *Кыҙҙар менән килгән бер егет һалам эшләпәле кыҙҙы капыл күтәреп алды. Теге кыҙ айкалаша, кыскыра башланы.* С. Ҡулибай./Ҡорал менән һуғышыу; алышыу. *Фашист был заводты йәнен-тәнен аямай һакларга булган, күрәһең. Төш ауганса, шул завод тирәһендә айкалаштык.* «Совет Башҡортостаны», 1966, 4 февраль.

**2.** *диал.* Ҡосаҡлашыу. *Айкалашып ултырыу.*

**АЙҠАЛДЫРЫУ** *к.* Көс менән ян-яҡҡа бәүелдереү; тирбәлтеү. *Йыр йырлана көслө, көр тауыштан айкалдырып бөтә донъяны.* Х. Ҡунаҡбай.

**АЙҠАЛЫУ** *к.* **1.** Көс тәьҫирендә ян-яҡҡа бәүелеү; тирбәлеү. *Айкала тирәкәйем, сайкала тирәкәйем* (Халыҡ йырынан)./*күсм.* Тулҡыныу, ҡуҙғалыу (күмәк кешегә ҡарата). *Зал айкала, залды шатлык баҫа, кул сабыуҙар яңгырап китәләр.* Х. Ҡунаҡбай.

**2.** *күсм.* Тулҡынланыу (уй-кисерешкә ҡарата). *Уйна, гармун! Уйҙар айкалһын, арыган тәндә кандар сайкалһын.* Ғ. Амантай.

**АЙҠАН** *и.* **1.** Берәй эш-хәлде ғәмәлгә килтергән сәбәп. *Асыуланып йөрөүеңдең айканы ни?*

**2. айҡаны менән** *бәйл. функцияһында кар.* **айҡанлы.** *Һабан түйы айканы менән кунактар килгән.* ■ *Мәкәлә .. Башкортостан йөмһүриәтенә 10 йыл тулыу айканы менән яҙыла.* Д. Юлтый.

♦ **Юл айҡан** юл ыңғайында. *Юл айкан инеп сыгыу.*

**АЙҠАНЛЫ** *бәйл.* Төп килештәге исем йәки исем ҡылымдарҙан һуң килеп эш-хәлдең, ваҡиғаның ниндәй сәбәптән булғанын белдерә; бер нәмә уңайы менән. *Байрам айканлы.* ■ *Бүләктәр биреү айканлы күтәрелгән шау-шыу тынды.* Б. Бикбай.

**АЙҠАНЫУ** *к.* Һелтәнеү. *Кеше көсөн күрҙең һин, хәлһеҙлегең белдең һин, кешегә мөгөҙ сайкама, еңермен тип айканма!* «Урал батыр».

**АЙКАТЫУ** *к.* **1.** *йөкм. кар.* **айкау.**

**2.** Ян-якка сайкалдырыу. *Кумегеҙ шаушыуҙарга бар донъяһын, айкатыгыҙ тормош диңгеҙен!* Х. Кунакбай.

**АЙКАУ** *к.* **1.** Төрлө якка болғау, ян-якка һелтәү. *[Апсатый:] Ат өҫтөндә һөңгө айкап, дошмандарга каршы барырмын.* Б. Бикбай. *Һыйыр .. мөгөҙө менән Актырнакты айкап ебәрҙе.* М. Ғафури.

**2.** Аркыры-буй йөрөп, ниҙең дә булһа араһын болартыу; тыныслыкты боҙоу.— *Хажи байҙың коба һыйыры уҫал да инде, бөтә көтөүҙе айкап йөрөй.* Ғ. Ғүмәр./Ниҙелер куҙғатып, аркыры-буй гиҙеү. *Бугәсәү батша бар, тиҙәр.., Яйык та буйынан яу башлап, илде айкап йөрөгән шул, тиҙәр* (Халык йырынан). *Замандарҙың хәтәр мәлдәрендә ут айкаган һине, Уралым. Карагайҙай мыкты ир-егеттәр башын һалган, һалмай коралын.* В. Ишмурзин.

**3.** Аркыры-буй кыҙырып ниҙер эҙләү, карау. *Унда тәүҙә куҙ һалырга, [шунан] гына урамына аяк баҫырга мөмкин. «Айкап килегеҙ әле, унан һуң инербеҙ»,— тине Мостай.* И. Насыри. / Куҙ йөрөтөп, ентекләп карау. *[Ләлә] Карауат, диван аҫтын пыр туҙҙырып айканы, бар өйҙө кыҙырып сыкты, әммә тубын тапманы.* А. Игебаев.

**4.** Алыш-һуғышта кумәк халыкты тукмау, кырыу. *Йәшнәтеп ялман кылысты айканык дошман яуын.* Ғ. Әмири.

**АЙКАШЫУ** *к.* **1.** Тотоношоп, уҙ-ара тарткылашыу; айпалашыу, көрмәкләшеү. *Токтомалга көрмәкләшеп, айкаша Алтынгужа, көрмәкләшеү, сәкәләшеү йәнәһе кыҙык уга.* А. Игебаев.

**2.** Яуҙа көрәшеү, алышыу. *Төн артынан калкып көн килерен онотманы халкым, айкашты. Үлемесле яуҙар ялкынынан алһыуланып, көткән таң атты.* С. Ғәбиҙуллин.

**3.** *диал.* Бәйләнеш тотоу, аралашыу.

**АЙКЫЛДАУ** *к. диал.* Аянлау.

**АЙКЫРЫЛЫК** *и. диал. кар.* **урҙа** [1] 1. *Шәлде айкырылыкка элеү.*

**АЙЛАП** *р.* Айы-айы менән. *Айыуголак айлап кына түгел, көнләп, сәгәтләп үҫкән, ти* (Әкиәттән)./Ай буйы. *Урман эшендә көнләп түгел, айлап йөрөйбөҙ.*

**АЙЛЫ** *с.* Ай яктыртып торған. *Айлы кис. Айлы төн.*

● *Айлы төн аҙашмаҫка якшы.* Мәкәл.

**АЙЛЫК** [1] *и.* **1.** Берәй эш-вакиғаға бағышланған ай. *Урман айлыгы. Юл төҙөү айлыгы.* ■ *1 октябрҙән Өфөлә юбилейга багышланган театр айлыгы уҙгарыласак.* «Совет Башкортостаны», 1967, 26 август.

**2.** *һөйл.* Бер айға түләнгән эш хакы. *Семья менән бер көн йәшәүгә етмәй ине алган айлыгы.* М. Сөндөклө.

**АЙЛЫК** [2] *с.* **1.** Айға етерлек. .. *Ә ул иген һеҙгә барлыгы бер айлык аҙык кына бит, ә артабан?* Һ. Дәүләтшина./Ай менән иҫәпләнгән. *Айлык укыу.*/Нисәлер айы тулған. *Ике айлык бала.*/Бер айға тейешле. *Айлык эш хакы.*/ Айға иҫәпләнгән. *Айлык план.*

**2.** Айға бер була торған, ай һайын кабатланыусан. *Айлык журнал.*

● *Көнлөк аҙык корһакта, айлык аҙык аркала.* Мәкәл.

**АЙЛЫКЛАУ** *к.* Айлап иҫәпләү йәки биреү.

**АЙМАК** [1] *и. тар.* **1.** Ырыу эсенә ингән бәләкәйерәк туғандаш төркөм.

**2.** *һөйл.* Билдәле бер урын; төбәк. *[Ирйегет:] Был урмандың һәр мөйөшө, һәр аймагы .. миңә таныш.* С. Мифтахов.

**3.** *диал.* Асык урын, аклан.

**АЙМАК** [2] *с. диал.* Күп, күмәк; ишле.

**АЙМАУ** *к.* **1.** Киң, мул итеп кулға эләктереү. *Аймап тотоп алыу. Урак менән аймап урыу.*

**2.** Ян-якты киң әйләндереп биләү. *Баяр имениеһы аймап яткан бай йылганы, тугай, урманды.* Б. Бикбай.

**АЙМЫЛ** *с.* Дөрөҫ булмаған, хата, яңылыш, яҙык. *Аймыл фекер.*

□ **Аймыл булыу** *шул ук* **аймылыш булыу** (*кар.* **аймылыш** [1]). **Аймыл итеү** *шул ук* **аймылыш итеү** (*кар.* **аймылыш** [1]).

**АЙМЫЛЫУ** *к.* Дөрөҫтән ситләшеү, хата эш кылыу; яңылышыу, хаталаныу, яҙлығыу./*күсм.* Ситкә баҫыу, ситкә тайпылыу. *Агай-эне һуҙенән мин аймылдым, еттем бугай гәзиз башыма* (Халык йырынан).

**АЙМЫЛЫШ** [1] *с.* **1.** Дөрөҫкә тап килмәгән, дөрөҫтән ситкә сыккан; хата, яңылыш, яҙык.// *Миләүшә бөтөнләй койолоп төштө, аяктары тыңламаҫ булды, көйгә аймылыш баҫты.* Д. Исламов.

**2.** *и. мәг.* Яңылышлык, яҙыклык. *Ҙур, һынаулы юл уҙылды. Оҙон юлдан атлаганда аймылыштар ҙа булгыланы, ләкин беҙ аҙашманык.* «Совет Башкортостаны», 1966, 1 ғинуар.

□ **Аймылыш булыу** 1) хата эш кылыу; яңылышыу, хаталаныу, яҙлығыу.— *Һин килә тип аймылыш булдым, югиһә уҙем генә бара инем;* 2) кем менәндер юлда тап булмай, яҙа йөрөү. **Аймылыш итеү** 1) дөрөҫтән ситкә тайпылдырыу; яңылыштырыу, яҙлыктырыу; 2) кем менәндер юлды яҙлыктырыу; яҙа йөрөтөү.

**АЙМЫЛЫШ** [2] *с.* Акылы камиллашмаған, акылы теүәлләнеп етмәгән. *Аймылыш сабый.*

**АЙМЫЛЫШТЫРЫУ** *к.* **1.** Дөрөҫтән ситкә сығарыу; яңылыштырыу, яҙлыктырыу.

**2.** Кем менәндер юлды яҙлыктырыу, яҙа йөрөтөү.

**АЙМЫЛЫШЫУ** *к.* **1.** Үҙ-ара тап булмай яҙа йөрөү. *Бер-беребеҙ өсөн ергә тыуган булганбыҙ: уҙебеҙ юл башында ук аймылышканбыҙ.* Ғ. Әмири.

**2.** Үҙ-ара юл бирешеү. *Аймылышып уҙыу.*

**АЙМЫТ** *и. диал.* Сата, айырса. *Беҙҙең кәлсер-табын ырыуының капка тамгаһында өҫтән бер аймыты бар.* Ғ. Хөсәйенов.

**АЙНАЛАЙЫМ** *и. диал. ирк.* Йәнкәйем, иркәм, һөйөклөм. *[Мәгфурә] Айбулатты улы кеүек косаклап куреште лә илап ебәрҙе: «Эй, айналайым, кайһылай ологайып, карт һалдат булып киткән! Йә, һау кайттыңмы?»* Һ. Дәүләтшина.

**АЙНАЛЫУ** *к. диал.* Әйләнеү, боролоу.

**АЙНОСТАЙ** *с. диал.* Иҫәр.

**АЙНЫҒЫУ** [айныкғ] *к.* Иҫереклектән ғәҙәттәге хәлгә кайтыу; айныу.

**АЙНЫҠ** *с.* Иҫерек түгел, айыҡ. *Айныҡ баш. Айныҡ аҡыл.*//*Айныҡ йөрөү.*

● *Аҡыллы иҫерек иҫәр айныҡтан яҡшыраҡ.* Әйтем.

**АЙНЫҠТЫРЫУ** *к.* Иҫереклектән ғәҙәттәге хәлгә ҡайтарыу; айныҡ итеү.

**АЙНЫТҠЫС 1.** *с.* Иҫереклекте бөтөрә торған, айныта торған. *Айнытҡыс дарыу.*

**2.** *и.* Иҫерек кешеләрҙе айныҡтырып сығара торған урын йәки йорт. *Айнытҡысҡа ябыу. Айнытҡыста ултырыу.*

**АЙНЫТЫЛЫУ** *к. төш. кар.* **айнытыу.**

**АЙНЫТЫУ** *к.* **1.** Иҫерек хәлдән арындырыу, айныҡ итеү.

**2.** Әсемлектең тәьҫир көсөн кәметеү. *Балды айнытыу.*

**3.** *күсм.* Ниҙендер көслө тәьҫиренән арындырыу; аңға килтереү. *Был тауыш Айбулатты һеңгәҙәгән хәленән айнытты.* Һ. Дәүләтшина.

**4.** *күсм.* Ниндәйҙер бер хәлдән арындырыу. *Йоҡонан айнытыу.*/Төрлө уй-кисерештән арындырып, тыныс хәлгә килтереү. *Хыялдан айнытыу.*

**5.** *күсм.* Тынысһыҙ хәлдән ҡотолдороу. *Ауыр уйҙарҙан айнытыу.* ■ *Рахманды иҫенә төшөрөү уны .. күңелһеҙ уйҙарынан айнытты.* Ә. Вәли.

**6.** *күсм.* Ауыр бер хәлдән ҡотолдороу. *Эҫе сәй тәндәрҙе иретеп, айнытып ебәрҙе.*

**АЙНЫУ** *к.* **1.** Иҫереклектән ғәҙәттәге хәлгә ҡайтыу. *Әсемлектән ҡаты иҫереүсе иртә менән айнып уяна.* Ҡ. Даян.

**2.** Көс-ҡеүәте кәмеү (төрлө әсе шыйыҡлыҡҡа ҡарата). *Бал айныған. Һеркә айныған.*/*күсм.* Булған кимәлдән ҡайтыу, кәмеү. *Үткән көндәреңде уйлап торһаң, нисек бер ҙә күңелең асынмаҫ! Яраланған күңелем яраһы, залимдарға үсем айнымаҫ.* Т. Йәнәби.

**3.** *күсм.* Ниҙең дә булһа көслө тәьҫиренән арынып, ғәҙәттәге хәлгә ҡайтыу. *Күҙ алдым томаланып китте. Бер аҙҙан һуң ғына айнып, уны [Һибәт ағайҙы] ҡосаҡлап алдым да илай башланым.* Д. Юлтый./Аңды биләгән ниндәй ҙә булһа бер ҡараш-фекерҙәң хаталығын төшөнөп, аҡылға килеү. *[Бай:] Ауыр булһа, иҫәр башың айныр, унда бәлки йүнле уй тыуыр.* З. Биишева.

**4.** *күсм.* Ниндәй ҙә булһа бер хәлдән арыныу. *Йоҡонан айныу.*/Күңелде биләгән уй-тойғонан ҡотолоп, тыныс хәлгә килеү. *Миңә рәхәт, миңә еңел, бөтәһе лә шундай асыҡ. Айныным буш хыялдарҙан, буш өмөттәр китте ҡасып.* М. Кәрим.

**5.** *күсм.* Тынғыһыҙ бер хәлдән йәки берәй нәмәнән ҡотолоп, тыныслыҡ табыу; бушаныу. *Эштән айныу. Кешенән айныу.* ■ *[Альгис] мендәргә йөҙтүбән ҡапланып та ҡараны,.. уйҙарынан айный алманы.* Ҡ. Ибәтуллин.

**6.** *күсм.* Ауыр бер хәлдән ҡотолоп, еңеллек тойоу. *Ҡайнар өйрә эскә йылылыҡ бирҙе, тәндәрҙе еңеләйтте. Бөтөнләй айнып, кеше булып киттек.* Д. Юлтый. *Таң атыуға ул [Емеш] манма һыуға төшөп тирләп, айнып китте.* З. Биишева.

● *Аҡыл айнымаҫ, алтын серемәҫ.* Әйтем.

**АЙПАЛАУ** *к.* Бер-берәүҙе тартҡылау, йолҡҡолау.

**АЙПАЛАШЫУ** *к.* Бирешмәҫкә тырышып, уҙара тартҡылашыу (шаярғанда, көрәшкәндә йәки һуғышҡанда). *Янғолдоң әнеһе [һуктырмаҫҡа] тырышып, стражник менән айпалашҡанда,.. маңлайын ҡамсы менән ярып ебәргәндәр.* Һ. Дәүләтшина.

**АЙПАШЫУ** *к. кар.* **айпалашыу.** *Иртәнән алып йоклап киткәнсе өйҙә күтәреп сыҡҡылай булып айпашҡан, тас та тос һуғышҡан ете малайҙы еңеп тотоуы анһат булмағандыр әсәйемә.* Ш. Янбаев.

**АЙРА** [1] *р. кар.* **айырата.**

**АЙРА** [2] *с. диал.* Армытлы. *Неплюевтар эстеләр, арҡабыҙҙан ит телеп, айра ҡамсы ишteләр, үҙебеҙҙе киҫтеләр.* Ғ. Сәләм.

**АЙРАН** *и.* **1.** Ҡатыҡ йәки ҡоротто һалҡын һыуға шыйыҡлап яһаған әсемлек. *Айран һыулау. Айран яҙыу.* ■ *Беҙ ағай менән бесән сапҡанда, инештең көмөштәй таҙа, һалҡын һыуына айран яҙып эсә торғайныҡ.* С. Кулибай.

**2.** Май бешкәндә айырылып сыҡҡан әскелтем шыйыҡлыҡ.

● *Айран эскән ҡотолған, ҡунәк ялаған тотолған.* Мәҡәл.

**АЙРАУЫҠ** *и.* Ҡыяҡлылар ғаиләһенә ҡараған йөнтәҫ һепертке башлы ҡыяҡ япраҡлы үҫемлек. **Дуңғыҙ айрауығы** ялпағыраҡ һабаҡлы, ҡыяҡ япраҡлы, йөнтәҫерәк һепертке башлы эре үҫемлек.

**АЙРЫ 1.** *с.* Икегә айырылып торған; айырсалы. *Айры тояҡ.* ■ *Айры һаҡал үҫтергән һары Мырҡас хан иле һинең менән булайым, атайҙан да биҙәйем, барынан да биҙәйем, һыуға төшөп үләйем.* «Заятүләк менән һыуһылыу». *Ҡарлуғасҡайҙарҙың ҡойроҡтары ҡайсы ғына һымаҡ айыры* (Халыҡ йырынан).

**2.** *р. диал.* Айырыуса.

**АЙРЫҒАНАТ** *и. диал.* Ҡарлуғас.

**АЙСА** *и. диал.* Талҡыш.

**АЙСБЕРГ** [*рус.* ⟨ *ингл.*]. *и.* Диңгеҙ-океандарҙа йөҙөп йөрөгән эре-эре боҙ тауы.

**АЙСЫҠ** [1] *и.* **1.** Көмөш менән селтәрләп эшләнгән ҡашлы биҙәүес.

**2.** Уҡалап йәки сигеп эшләнгән ай һымаҡ биҙәк.

**АЙСЫҠ** [2] *и. кар.* **айыссыҡ.**

**АЙТ** *ымл.* Ҡасҡан-боҫҡан кешене ҡапыл күреп ҡалғанда ҡысҡырып әйтелә.

◆ **Айт тнгәнгә тайт итеү** бер-берәүҙең һүҙен тыңларға, теләген үтәргә әҙер генә тороу.

**АЙТАЙ** *өнд. кар.* **ләл-ләл 1.** *Айтай тороу.*

**АЙТАШ** *и.* Зәңгәрһыу күк төҫтәге затлы таш. *[Цейлон] .. ҡиммәтле аҫыл таштары, топаздары, ҡыҙыл яҡуттары, сапфирҙары, аметистары һәм айташтары менән дан алған.* «Совет Башҡортостаны», 1965, 31 март.

**АЙ-ҺАЙ** [1] *ымл.* **1.** Аптырағанда, һоҡланғанда һәм башҡа төрлө тойғо белдергәндә әйтелә. *[Фатима:] Ай-һай, һиңә һуҡты ла ҡүпте икән.* Б. Бикбай.— *Ай-һай, бик ҙур бәләгә тарығанһың икән,— тип әйтте, ти, ҡарт* (Әкиәттән).

**2.** Берәй эш-хәлгә шик белдергәндә, икеләнгәндә әйтелә. *[Мәғфүрә:] Ай-һай, уның юхаланыуына ышанма, улым, ул — йылан аяғын киҫкән.* Һ. Дәүләтшина.

**3.** Халыҡ йырҙарында тойғоно көсәйтеү һәм шиғыр үлсәүен тултырыу өсөн ҡулланыла. *Ай-һай ғына бесән сабыуы, ауыр икән салғы яныуы* (Халыҡ йырынан). *Был түрәлек, ай-һай, бирелде микән, тимен, аҡылдары камилға күрә* (Халыҡ йырынан).

◆ **Ай-һайға алыу** нимәгәлер борсолоу, ҡайғыртыу; иҫ китеү. **Ай-һайға инеү** күңелдә борсоу. *Уларҙың икеһе лә — Ҡотдосо ла, Мыйығы ла — бит йыумаған. Һуғыш бармы-юҡмы — ай-һайҙарына ла инмәй.* Ғ. Шәрипов.

● *Ай-һай, телең, тел осонда беҙең.* Әйтем.

**АЙ-ҺАЙ**[2] *р. ҡар.* **ләл-ләл** 1. *Айһай тороу.*

**АЙҺАЙЛАУ** *ҡ.* Һөрән һалып ҡысҡырыу; һөрәнләү. *Атлы ҡаҙаҡтарҙың .. тағы бер төркөмө айһайлап аткылай башланы.* А. Таһиров.

**АЙҺЫН** *с.* Ай йөҙлө, һылыу (ҡыҙҙарға ҡарата). *Әммә һуңғы ваҡыт Ҡыҙрас түгел, ҡарттың ҡыйғас ҡашлы айһын ҡыҙы күберәк булды Аҡъюл уйында.* Р. Бикбаев.

● *Айһынды айһын күрә алмай.* Әйтем.

**АЙҺЫНДЫ** *с. диал.* **1.** Арыу уҡ ҙур, ҙур ғына (бала-сағаға ҡарата). *Айһынды ҡыҙ.*

**2.** Байтаҡ, күп кенә (ваҡытҡа ҡарата). *Уның киткәненә айһынды булды инде.*

**АЙЫҒЫУ** [айыҡ*ғ*] *ҡ. диал.* Айныу.

**АЙЫ-КӨНӨ** *и.* Үҙ ваҡыты, тейешле мәле. *[Мәғфүрә:] Эй аллам, иплән кенә йөрө инде. Айың-көнөң тулһа, оят тип әллә нишләп булмай ул.* Һ. Дәүләтшина.

**АЙЫҠ** *с.* **1.** Иҫерек түгел, эсмәгән; айныҡ. *Айыҡ кеше. Айыҡ саҡ. Айыҡ булыу.//Айыҡ йөрөү.* ■ *[Үтәгол:] Үҙең нисә ҡарама иҫерек, ә улар [ҡунаҡтар] айыҡ.* Ғ. Әхмәтшин.

**2.** Ысын хәлде дөрөҫ аңлаған, дөрөҫ аңлауға нигеҙләнгән. *Айыҡ баш. Айыҡ кеше. Айыҡ фекер.//Айыҡ ҡарау.*

**АЙЫҠЛЫҠ** *и.* **1.** Айыҡ хәл, иҫерек түгеллек. *Айыҡлыҡ өсөн көрәш. Айыҡлыҡ йәмғиәте.*

**2.** *күсм.* Уйлап, аҡыл менән эш итә белгәнлек. *Һөйкөмһөҙ өйҙән тиҙерәк китеү теләге менән [Гөльямал] ҡапҡаға ҡарай атланы. Ләкин ниндәйҙер көс, тулыһынса асыҡланып етмәгән башҡа нәмә айыҡлығы уны туҡтатты.* Я. Хамматов.

**АЙЫЛ**[1] *и.* **1.** Ыңғырсаҡты бауыр аҫтынан тарттырып нығыта торған яҫы бау. *Алтмыш йылҡы араһында атлығып торған алты ат юҡ, айыл етмәҫ ала ат юҡ, ҡойошҡан етмәҫ ҡола ат юҡ.* «Аҡһаҡ ҡола».

**2.** Эйәрҙең сандырҙан алып тартыла торған ҡайышы. *[Айһылыу:] Теклә берәк ҡараһам, баяғы егет үҙе ине, .. алтын-көмөш эйәрле, болғар тартҡы, айыллы.* «Аҡбуҙат».

**3.** *диал.* Билғау.

**АЙЫЛ**[2], **айыл башы** *и.* Ҡайыш осондағы ҡаптырғыс тимер; ҡайыш тимере, таралғы. *Мостафиндың еҙ төймәләре, ҡайыш айылдары, погон йондоҙҙары ялтлап тора.* Т. Килмөхәмәтов.

**АЙЫЛСА** *и. диал. ҡар.* **айыл**[2].

**АЙЫМ** *с. иҫк.* Зиннәтле, дәрәжәле, матур (ҡатын-ҡыҙға ҡарата).

● *Айым ҡыҙҙан ай биҙер.* Әйтем.

**АЙЫНДЫРЫУ** *ҡ.* Ниндәй ҙә булһа хәл-тойғонан ҡотолдороу; арындырыу. *[Ислам:] — Соня?! — Таныш тауыш иҫтәлектәрҙән айындырып ебәрҙе.* Т. Ғарипова.

**АЙЫНСАҠЛАТЫУ** *ҡ.* Ҡыҙғаныу, йәлләү хисе уятып, күңелен йомшартыу. *Әсе, ҡыҙғаныс тауыш менән илау, ялбарыу, һалдат итеге башын үбеп ялыныуҙар — береһе лә «мәҙәни халыҡтың» күңелен йомшарта, бәғерен айынсаҡлата алманы.* А. Таһиров.

**АЙЫНЫУ** *ҡ.* **1.** Ниндәй ҙә булһа хәл-тойғонан ҡотолоу; арыныу. *Закир һаман аптырауҙан айына алмай һүҙһеҙ текләп тора ине.* З. Биишева.

**2.** Тәүге фекер, вәғәҙә йәки һүҙҙән кире ҡайтыу; дүнеү. *Һыйырҙы һатыуҙан айынды.*

**АЙЫРА** *р.* Асыҡ итеп, айырып. *Айыра әйтеү. Айыра белеү.*

**АЙЫРАТА** *р.* **1.** Айырым бер дәрәжәлә; бигерәк тә, айырыуса. *Ҡуҙыйкүрпәс айырата бер таһыллыҡ менән уның ҡылысын ҡайырып алды ла урталай һындырып ташланы.* «Ҡуҙыйкүрпәс менән Маянһылыу».

**2.** Үҙенә башҡа. *Бүре аулауҙың айырата бер әкәмәте була.* С. Кулибай.

**АЙЫРҒЫС** *и.* Аралаш, ҡатнаш, эргәләш нәмәләрҙе айыра, бүлә торған һәр төрлө ҡулайлама. *Айырғыс ҡуйыу. Айырғыс менән бүлеү.*

◆ **Һыу айырғыс** йылғаларҙы ике яҡҡа айырып ағыҙған тау.

**АЙЫРМА**[1] *и.* Бер нәмәне икенселәренән айырып күрһәткән сифат; үҙенсәлек. *[Айбулат:] Шулай инде ул. Һыу менән һыуҙың да, кеше менән кешенең дә айырмаһы күп була.* Һ. Дәүләтшина.

**АЙЫРМА**[2] *и.* Дөйөм тәртип ҡағиҙәләренән тайпылыш. *Айырма яһау.*

**АЙЫРМА**[3] *и.* Икегә айырылған урын; айырса, сатлыҡ. *Урал тауҡайҙары борма-борма, бормалары һайын айырма* (Халыҡ йырынан).

**АЙЫРМА**[4] *и. мат.* Алыу ғәмәле һөҙөмтәһендә килеп сыҡҡан һан.

**АЙЫРМАЛЫ** *с.* Үҙенә башҡа сифатлы; үҙенсәлекле. **Айырмалы хәл.** ■ *Сорғоҙ ауылының тик үҙенә генә хас тәбиғәте бар: бында башҡа ерҙәгенән айырмалы рәүештә һалҡын ҡыҫыҡ еле иҫә.* А. Игебаев.

**АЙЫРМАЛЫҠ** *и. ҡар.* **айырма**[1]. *Синфи айырмалыҡ.* ■ *Ауыл менән ҡала араһында бик күп айырмалыҡ бар.* Р. Шәкүров.

**АЙЫРМАҺЫҘ**[1] *с.* Үҙенә башҡа сифатһыҙ; үҙенсәлекһеҙ.

**АЙЫРМАҺЫҘ**[2] *с.* Дөйөм тәртип, ҡағиҙәнән тайпылышһыҙ. *Айырмаһыҙ ҡарау.*

**АЙЫРСА** *и.* **1.** Икегә йәки бер нисәгә айырылып киткән ер, сат. *Азамат теге бабай әйткән йылға буйындағы юл айырсаһына ҡараңғы төшкәс кенә барып етте.* Ҡ. Даян.

**2.** Айырым торған ҡуш нәмәнең береһе; сата. *Һәнәк айырсаһы. Тояҡ айырсаһы.* ■ *Ике айырсалы был ҡарағастың бер айырсаһында борон-борондан таҙғара оялай торғайны. Ул йыл да бер бала сығара ине.* С. Кулибай.

**АЙЫРСАЛАНЫУ** *ҡ.* Икегә йәки бер нисәгә айырылыу, айырсалы, саталы булыу. *Юл айырсаланды.*

**АЙЫРСАЛЫ** *с.* Айырсаланып торған; саталы, сатлы. *Әллә уйҙарыбыҙ айырыламы, айырсалы юлдар шикелле.* А. Игебаев.

**АЙЫРТА** *р. диал.* Айыра. *Айырта яҙ. Айыртарак һөйлә әле.*

**АЙЫРТЫЛЫУ** *к. төш. кар.* **айыртыу.** *Нигмәтйән ағай, киң маңлайындағы борсак-борсак тирҙәрен һөртөп, яңы ғына айыртылған йүкә балына ынтылды.* Ә. Зәйнуллин.

**АЙЫРТЫУ** *к.* **1.** *йөкм. кар.* **айырыу** 1—4, 6,7. *Сорттарға айыртыу. Тыуған илдән айыртыу.*

**2.** Сепаратор аша үткәреү (һөттө). *Һыйырҙы һауып көтөүгә кыуғас, Иркә.. һөттө айыртырға ла үҙе барып ҡайтты.* Ә. Вәли.

**3.** *кар.* **ағыҙыу** 4.

**АЙЫРЫ** *и. кар.* **айырса.** *Юл айырыһы.// Айыры тояк.*

**АЙЫРЫЛҒЫҺЫҘ** *с.* Айырылмаҫлыҡ булып береккән, үҙ-ара ныҡ бәйләнгән. *Айырылғыһыҙ дуҫтар. Айырылғыһыҙ булыу.* ■ *БАССР халкы .. үҙенең бөтә совет халкының айырылғыһыҙ бер өлөшө булыуын аңлап, .. ошо Конституцияны кабул итә..* Башҡорт АССР-ының Конституцияһы, 1984.

**АЙЫРЫЛЫ** *с.* Икегә йәки бер нисәгә айырылып торған. *Айырылы юл.*

**АЙЫРЫЛЫУ** *к.* **1.** *төш. кар.* **айырыу** 1, 2, 7, 8. *Икегә айырылған толом.* ■ *Һарыктарҙы тиҙерәк көрәйтеү өсөн, көтөүгә сыккас, бәрәстәр инәләренән айырыла.* «Совет Башҡортостаны», 1968, 28 февраль.

**2.** Бер урындаи бер нисә тармаҡҡа бүленеү; тармаҡланыу. *Бара торғас, быларҙың [хан менән Куҙыйкүрпәстең] юлы ике якка айырылды, ти.* «Ҡуҙыйкүрпәс менән Маянһылыу». / Бер төптән сит-ситкә таралыу. *Ул [Айбулат] бишалты быуын айырылған булһа ла, бер ырыуҙан булғанлыктан, Ныязғолға ағай-эне һанала ине.* Һ. Дәүләтшина./Башҡа-башҡа төркөмгә бүленеү. *Үҙ-ара килешмәй, икегә айырылыу.*

**3.** Башҡа-башҡа өлөш булып, ара менән бүленеү. *Шәүәлиҙең өйө ауыл ситендә генә, башка йорттарҙан байтаҡ араға айырылып тора.* Б. Бикбай.

**4.** Төркөмдән йәки бергә булған иш-иптәштән бер башҡа бүленеү. *Айырылып калыу.* ■ *Мин тиҙ генә сафтан айырылам да, шунда [пункт-ка] табан атлайым.* Д. Юлтый./*кусм.* Араны өҙөп, ситләшеү. *Коллективтан айырылыу.* ■ *Батша халыктан айырылып, каңғырып йөрөй торғас, астан үлгән дә куйған, ти* (Әкиәттән). *Кемде генә күрһәм, шулар әйтә, айырылма иҫке дуҫтан, тип* (Халыҡ йырынан)./*кусм.* Берәй эш-хәлгә ҡатнашмай, ситтә тороу. *Тормоштан айырылыу.*

**5.** Бер эш йәки нәмәнән ситләшеү; араланыу. *Китаптан айырыла алмау.* ■ *[Мамлиев] күҙләгән һалып ыргытты, кағыҙҙан айырылды, халык күҙенә карап һөйләргә тотонһо.* Р. Низамов.

**6.** Хужалыҡтан йәки ғаиләнән бүленеп сығыу; башҡа сығыу. *[Бай:] Әле татыу торған ярамаған. Бар айырылып сығып китегеҙ, әрепләшеп донъя көтөгөҙ.* Б. Ишемғол.

**7.** Ғаилә мөнәсәбәтен өҙөп, башҡа сығыу (иргә, ҡатынға ҡарата). *[Ләлә] бынан биш ай ғына элек иренән айырылып, ниндәйҙер әҙип Мамаевка кейәүгә сыккан.* Б. Бикбай.

**8.** Мал-мөлкәтте йә башҡа нәмәне ҡулдан ысҡындырыу; мәхрум ҡалыу. *Кулак тиҙ генә үҙ мөлкәтенән айырылырға теләмәй.* «Совет Башҡортостаны», 1968, 23 август.

**9.** Ҡайырылып, һынып йәки йыртылып сығыу. *Ҡоштоң канаты айырылып Алпамыша янына килеп төшкән, ти.* «Алпамыша».

**10.** Үҙенсәлекле булып, бер башҡа урын тотоу. *Әтколдоң өйө .. матурлығы, байлығы менән ауылдағы башка өйҙәрҙән ала бүләк булып әллә ҡайҙан айырылып тора.* Ғ. Дәүләтшин.

♦ **Донъянан айырылыу** *шул ук* **донъя ҡуйыу** (*кар.* **донъя**).

● *Айырылғанды айыу ашар, бүленгәнде бүре ашар.* Мәҡәл.

**АЙЫРЫЛЫШЫУ** *к. урт. кар.* **айырылыу** 4, 6. *Бер оянан сыккан бәпкә кеүек, айырылышып китеп барабыҙ* (Халыҡ йырынан).

**АЙЫРЫМ** *с.* **1.** Бүтән нәмәләр менән бергә ҡушылмаған; үҙенә бер башҡа. *Айырым өй.// Айырым йәшәү.* ■ *Беҙҙең фатир ҙур, айырым бүлмәләр бар.* Д. Юлтый. *Батша ашамай ултыра, айырым табакка һалып килтергәндә көтә* (Әкиәттән). / Үҙенә башҡа бер берәмек булған. *Логопедияны айырым балаға карата кулланырға мөмкин булһа ла, тотош класс өсөн ярамай.* М. Тажи.

**2.** Үҙенә башҡа бер сифатҡа эйә булған; үҙенә бер төрлө. *Өйҙөң стеналары һайлап йыйылған карағайҙан бөтөп, бүрәнәләре айырым бер карағускыл йәшел буяуға буятылған.* Ғ. Дәүләтшин./Үҙенә башҡа маҡсатлы. *Айырым эш булмаған сакта ла шунда ултырып һөйләшеү гәҙәт булып киткәйне.* Һ. Дәүләтшина.

**3.** Үҙенә башҡа бер дәрәжәгә йәки көскә эйә. *Уға [Новиковка] айырым бер якынлык, хөрмәт менән карайҙар.* Д. Юлтый.

**4.** Үҙенә башҡа; ҡайһы бер. *Айырым етешһеҙлектәр. Айырым каршылыктар.*

♦ **Айырым алғанда** берәй эш-хәлде йәки нәмәне үҙенә башҡа алып, үҙен генә ҡарағанда.

**АЙЫРЫМ-АСЫК** *с.* Еңел айырырлыҡ; асыҡ. *Айырым-асык һүҙ. Айырым-асык булыу.// Айырым-асык ишетелеү.* ■ *Болоттар ҡайҙалыр таралған. Күк йөҙө таҙарған. Йондоҙҙар айырым-асык күренә.* А. Таһиров.

**АЙЫРЫМЛАНЫУ** *к.* Айырым бүленеп сығыу; башҡаланыу.

♦ **Айырымланған эйәрсен киҫәктәр** *грам.* үҙенә башҡа бер маҡсат менән мәғәнә яғынан айырып әйтелә торған һөйләм киҫәктәре.

**АЙЫРЫМЛАУ** *к.* Төрлө-төрлөгә айырыу; айырма ҡуйыу. *Малайҙарҙың һәр береһен башка айырымлап сығаргандар, ти* (Әкиәттән).

**АЙЫРЫМЛЫҠ** *и.* Ниҙеңдер араһындағы ҙур айырманы күрһәткән сифат; айырмалыҡ. *Коммунистик хәрәкәттәге фекер айырымлыктары .. коммунизм эшенә зыян килтерә.* «Совет Башҡортостаны», 1965, 11 март.

**АЙЫРЫМ-ӨҘӨК** *с.* Теүәл булмаған; өҙөк-мөҙөк. *Айырым-өҙөк хәбәр. Айырым-өҙөк һүҙ.*

**АЙЫРЫУ** *к.* **1.** Башҡа-башҡа өлөш йәки төркөм итеү; бүлеү. *[Алпамыша] халыҡты ике ҡулы менән икегә айыра ла,.. ағасҡа ҡуҙәп атып ебәрә.* «Алпамыша». *Һыу ҡыҙы ҡырҡ ҡоласлы сәсен икегә айырып артҡа ташлай.* «Заятүләк менән Һыуһылыу».

**2.** Сифатына, үҙенсәлегенә ҡарап бүлеү, төрөн билдәләү. *Төрҙәргә айырыу. Орлоктарҙы сортҡа айырыу.*/Сепаратор аша үткәреү (һөттө); айыртыу.

**3.** Бер төркөмдөң йәки бер бөтөн нәмәнең күпмелер өлөшөн бүлеп алыу. *Эш кейемдәрен айырып ҡуйыу.* ■ *Һайлап-һайлап аҙаматын айыра ул [Ҡарағөлөмбәт] үҙенә тәбиғ булған халыҡтан.* «Бабсаҡ менән Күсәк».

**4.** Араны өҙөп, ситләшергә мәжбүр итеү. *Башҡайҙарға төшкән ауыр нужа тыуған илдән беҙҙе айырҙы* (Халыҡ йырынан). *[Һыуһылыу:] Егетем, атҡан һунарың өйрәк түгел, аңла һин.., мине һыуҙан айырһаң, бәхеттән буш ҡалырһың.* «Заятүләк менән Һыуһылыу»./Бергә булыу мөмкинлегенән яҙҙырыу. *Балаларҙы айырып башҡа сығарыу.* ■ *Айырылмаҫ та инем, әсәкәйем, атакайым үҙе айырҙы* (Сеңләүҙән).

**5.** Кеше ҡулынан, ҡош-ҡорттоң теш-тырнағынан аралау. *Әллә ниндәй бер ҡатын бүлмәгә инеп, сәңгелдәктәге баланы алып китергә иткәндә, эт баланы айырып алып ҡалған* (Әкиәттән)./Һуғышҡан, талашҡан кешеләрҙе аралау. *Айпалашҡан малайҙарҙы айырыу.*

**6.** Ҡатыны менән никахты боҙоу. *[Мәрғуп — Шәхмиғә:] Һин мине мыҫҡыл итәһең, улай иткәнсе айыр ҙа ебәр.* Т. Йәнәби.

**7.** Күстән бүлеп, башҡа сығарыу (бал ҡортона ҡарата).

**8.** Имеүҙән туҡтатыу; ташлатыу. *Баланы айырыу. Быҙауҙы айырыу.*

**9.** Нимәнәндер мәхрүм итеү. *[Рәхимә — Ныязғолға:] Ҡайҙа барһаң, һүҙең үтә, аллаһы тәғәлә шул байлығыбыҙҙан айырмаһын.* Һ. Дәүләтшина.

**10.** Эш-шөғөлдән бүлдереү. *Эштән айырыу. Уҡыуҙан айырыу.*

**11.** Ҡайырып, һындырып, йыртып, умырып сығарыу. *Айыра йыртыу. Айырып, һындырып төшөрөү.* ■ *Һаҡмар ғына буйы һары тал, башҡынайын айырып һыуға һал* (Халыҡ йырынан).

**12.** Мөнәсәбәт айырымлығы күрһәтеү; тигеҙ ҡарамау. *Ауылда ҡунаҡ саҡырыу булһа, байынярлыһын айырмай ҡунаҡҡа саҡыралар.* Ғ. Дәүләтшин. *[Ғәләү:] Колхоз да йөрәк эше, уны яныл һөйөргә, үҙ мөхәббәтеңдән айырмаҫҡа кәрәк.* Б. Бикбай.

**13.** Ике араларғы айырманы билдәләү. *Төндәрен урамда бер нәмәне лә айырып булмай.* ■ *[Ишбулды:] Эҙ айырыу кәрәк һунарсыға, ҡош айырыу кәрәк аусыға.* Х. Ғәбитов./Айышын белеү, асылын аңлау; таныу. *[Тәнзилә:] Мәктәп ҡараусы булһам да, уны-быны айырырлыҡ зиһенем бар әле.* М. Тажи.

♦ **Айырып ашау** бүтәндәрҙән айырым әҙерләп, яҡшыраҡ итеп ашау. **Аҡ-ҡараны айырмай** кемдең кем йәки ниҙең ни икәнен ҡарап тормай. *Киткән һуғыш. Аҡ-ҡараны айырмай тап килгән берәүҙе дөмбәҫләй бирәләр.* Б. Бикбай. **Аҡты ҡаранан айырыу** яҡшы менән насар араһындағы айырманы күреү. **Аҡты-ҡараны айырыу** нимәнең ни икәнен белеү, айыра алыу. **Ике быҙауға кәбәк айыра белмәү** анды-тонды белмәү, наҙан булыу.— *Ике быҙауға кәбәк айыра белмәй, үҙе мөғәллим булам, ти.* **Кеше айырыу** төрлө кешегә төрлө мөнәсәбәт күрһәтеү, тигеҙ ҡарамау. *[Низам:] Колхоз булғас, тигеҙ булһын ине, кеше айырырға ярамаҫ ине, тим.* М. Тажи. **Ҡаранан аҡты айырыу** *кар.* **аҡты ҡаранан айырыу. Ҡараны-аҡты айырыу** *кар.* **аҡты-ҡараны айырыу. Тамаҡ айырыу** *кар.* **тамаҡ. Уңды-һулды айырыу** тормошто аңлау.— *Рәсих әфәнде,— тинем мин, беҙҙең кеүек артта ҡалған милләттәрҙән дә уңды-һулды айыра белгән кешеләр етешергә ваҡыттыр бит инде.* Ғ. Ғүмәр. **Хәреф айырыу** *кар.* **хәреф.** *Атайым үҙ тырышлығы менән хәреф айырырға өйрәнде.* Ә. Вәли.

● *Дуҫтан дошманды айыра бел.* Әйтем.

**АЙЫРЫУСА** *р.* Айырым бер дәрәжәлә; бигерәк тә. *Ял көндәрендә, көн матур, сыуаҡ булһа, айырыуса күңелле була бит ул.* Т. Йәнәби./Үҙенә башҡа; бигерәк тә. *Айырыуса мөһим мәсьәлә.*

**АЙЫССЫК** *и.* Йүгәндең ауыҙлыҡ дүңгәләгендәге тейәге.

**АЙЫТ** *и. кар.* **ғәйет.**

**АЙЫУ** *и.* **1.** Ауыр кәүҙәле, йыуан ҡыҫҡа аяҡлы имеҙеүсе йыртҡыс йәнлек. *Аҡ айыу. Көрән айыу. Ҡара айыу. Ата айыу. Инә айыу. Бала айыу. Тайлаҡ айыу. Оло айыу. Айыу тиреһе. Айыу өңө. Айыу алыу. Айыу һуғыу.* ■ *Алпан-толпан атлаған айыуы күп Урал тау* (Ҡобайырҙан).

**2.** *с. мәғ.* Шул йәнлектең тиреһенән тегелгән. *Айыу тун.*

**3.** Килбәтһеҙ ҙур кәүҙәле, һалмаҡ хәрәкәтле, көслө кешегә ҡарата әйтелә.

♦ **Айыу баланы** ҡыҙыл сәскәле, ҡыҙыл емешле ҡыуаҡ.

**Айыу башы ашарҙай булыу** *кар.* **ашау. Айыу емеше** дымһылыраҡ ерҙе үҫкән итләс йыуан тамырлы, ҡыҙыл йәки ҡара емешле эре дарыу үләне. *Айыу емешен ашамайҙар, теш һыҙлағанда ғына ҡулланалар.* **Айыуҙан ҡасҡан бүрегә** бер хәлдән ҡотолоп, икенсе бер ауырыраҡ хәлгә ҡалған кешегә ҡарата әйтелә. *[Сәлимә:] Минең Айбулатым, бахыр, айыуҙан ҡасҡан бүрегә тигәндәй, Ныязғол ҡулында бушлай ялсы булып .. тик йөрөй.* Һ. Дәүләтшина. **Айыу майы һөртөү** нимәнелер шым ғына һорауһыҙ алып киткәндә әйтелә; урлау, сәлдереү. *[Йәмил:] Бер кем дә һиҙмәне, бер кем дә күрмәне, был ҡайышҡа айыу майы һөртһәм, йомшаҡ ҡына һеңеп ҡуймаҫмы икән?* И. Ниғмәтуллин. **Айыу ыҫлау** ҡышҡылыҡҡа ятҡан айыуҙы, алыу өсөн төтәтеп, өңөнән сығарыу. **Айыу әйләнгән буран** *йәки* **айыу бураны** (*кар.* **буран** 1). **Айыу ятҡырыу** айыуҙың ҡышҡылыҡҡа ятҡан өңөн билдәләү. *Ҡырпаҡ ҡар яуҙымы, беҙҙең яҡта һунарсылар айыу ятҡырып ҡалыуҙы кәсеп итә.* Н. Мусин.

**АЙЫУБАШ** *и. диал. кар.* **борғоса** 1

**АЙЫУСЫ** *и.* Айыуға һунар иткәи, айыу ала торған кеше. *Айыуҙы нисек үлтергәнемде һорашмаған кеше калмағандыр .. Даным бөтә тирә-як ауылга таралды. Мине «Акназар батыр» йәки «Айыусы Акназар» тип йөрөтә башланылар.* Ҡ. Даян.

**АЙЫУТАБАН** *и.* Уҡ япраҡлы, төрлө төҫтәге ойкаш сәскәле күп йыллыҡ бейек үҫемлек.

**АЙЫШ** *и.* Ниҙең дә булһа асылын сискән төп мөғәнә; асыл. *Айышына төшөнөү* (йәки *төшөү*). *Һүҙҙең айышлы.* ■ *Һәүбән кoштан бөтә серҙе һораша башланы, ти. Ҡош уға эштең айышын теҙеп һөйләп бирҙе, ти.* «Аҡбуҙат». *Йомғаҡ осон тапмаһаң, үҙем табып бирәйем; йомаҡ айышын тапмаһаң, үҙем табып бирәйем* (Ҡобайырҙан).

**АЙЫШЛЫ** *с.* Аңлайышлы, асыҡ. *Айышлы һүҙ.* ■ *[Айҙар:] Айышлыраҡ итеп һөйлә әле, ни булды?* Б. Бикбай.

**АЙЫШТА** *р. кар.* **асылда.** *Тәү карамакка кемдең кайҙа нимә эшләгәнен аңларлыҡ түгел һымаҡ. Ләкин айышта ул улай түгел.* «Совет Башҡортостаны», 1968, 20 сентябрь.

**АЙЫШ-ТОЙОШ** *и.* Ниҙең дә булһа асылы, рәте-сираты. *Был эштең айыш-тойошона һис тә сыға алмайым.*

**АЙЫШҺЫҘ** *с.* Аңлайышһыҙ, аңлауы ҡыйын булған. *Айышһыҙ һүҙ.*

**АЙЫШЫУ** *к. кар.* **аңлау.**

**АЙӘТ** [*ғәр.*] *и. кар.* **аят.**

**АКАДЕМИ́ЗМ** [*рус.*] *и.* **1.** Фәндә һәм уҡытыу эшендә: тормоштан, практиканан айырылған саф теоретик йүнәлеш.

**2.** Һынлы сәнғәттә: классик (антик) үрнәктәргә догматик рәүештә эйәреп эш иткән йүнәлеш.

**АКАДЕ́МИК** [*рус.*] *и.* **1.** Фәндәр академияһының тулы хоҡуҡлы ағзаһы. *Танылған академик. Академик итеп һайлау.*

**2.** Ниндәй ҙә булһа академияға һайланған кешенең ағзалыҡ исеме.

**АКАДЕМИ́К** *с.* **1.** Академияға, уның эшенә мөнәсәбәтле, бәйләнешле. *Академик баҫма.*

**2.** Уҡыу-уҡытыу эшенә мөнәсәбәтле. *Академик йыл. Академик сәғәт.*

**АКАДЕ́МИЯ** [*рус.* 〈*гр.*] *и.* **1.** Фән йәки сәнғәтте үҫтереү бурысын үтәгән юғары дәүләт ойошмаһы. *СССР Фәндәр академияһы. Медицина фәндәре академияһы.*

**2.** Ҡайһы бер юғары уҡыу йорттарының атамаһы. *Ауыл хужалығы академияһы. Хәрби академия.*

◆ **Академия театры** өлгөлө дәүләт театрҙарына бирелә торған маҡтаулы исем. *Башҡорт дәүләт академия драма театры.*

**АКА́ЦИЯ** [*рус.* 〈*гр.*] *и. шул уҡ* **бохар селеге** (*кар.* **селек**).

**АКВАЛА́НГ** [*рус.* 〈*лат.*] *и.* Һыу аҫтында тын алыу өсөн файҙаланыла торған махсус аппарат. *Һыу аҫтына акваланг кейеп төшөү.*

**АКВАЛАНГИ́СТ** [*рус.*] *и.* Акваланг кейеп, һыу төбөнә төшөп йөрөй торған кеше. *Беҙҙең физкультура уҡытыусыһының һыу аҫтында төшөрә торған аппараты бер. Аквалангист ул.* И. Абдуллин.

**АКВАМАРИ́Н** [*рус.* 〈*лат.*] *и.* Зәңгәрһыу йәшел йәки зәңгәр төҫтәге затлы таш.

**АКВАРЕ́ЛЬ** [*рус.* 〈*ит.*] *и.* **1.** Һыуҙа иҙелә торған буяу һәм шул буяу менән һүрәт төшөрөү алымы. **Акварель техникаһы.**

**2.** Шул буяу менән яһалған һүрәт. *Акварель күргәҙмәһе.*

**АКВА́РИУМ** [*рус.* 〈*лат.*] *и.* Һыу тереклектәрен, үҫемлектәрен аҫрау һәм үрсетеү өсөн файҙаланылған махсус быяла һауыт йәки быуа. *Балалар гөлдәргә һыу һибә, аквариумдағы балыҡтарҙы ашата.* «Совет Башҡортостаны», 1966, 7 ғинуар.

**АКВАТОРИАЛЬ** [*рус.* акваториальный] *с.* Ниндәйҙер акваторияға мөнәсәбәтле. *Акваториаль һыуҙар.*

**АКВАТО́РИЯ** [*рус.* 〈*лат.*] *и.* Һыу майҙаны, ниҙең дә булһа һыу менән ҡапланған өлөшө. *Тымыҡ океан акваторияһы.*

**АККОМПАНЕМЕ́НТ** [*рус.* 〈*ит.*] *и.* Йырсыға йәки айырым инструментта көй башҡарыусыға ҡушылып уйнау. *Һәр көйгә гармоник һәм ритмик фон биргән аккомпанемент ҡушырға ярай.* Ғ. Сөләймәнов.

**АККОМПАНИА́ТОР** [*рус.* 〈*фр.*] *и.* Аккомпанемент музыкаһын башҡарған кеше.

**АККО́РД** [1] [*рус.* 〈*ит.*] *и.* Бер нисә музыкаль тауыштың гармоник ҡушылышы. *Аккорд биреү.* ■ [*Мазһар*] *бер нисә көйҙөң аккордын алып ҡарай.* С. Кулибай.

◆ **Һуңғы аккорд** ниҙе лә булһа тамамлап ҡуйған һуңғы эш йәки хәл.

**АККО́РД** [2] [*рус.* 〈*ит.*] *и. иҫк.* Эш буйынса төҙөлгән килешеү. *Аккорд заданиеһы. Аккорд буйынса эшләү.*

**АККОРДЕО́Н** [*рус.* 〈*фр.*] *и.* Уң яҡ клавиатураһы фортепьяно рәүешендә булған хроматик гармун. *Аккордеонға ҡушылып йырлау.*

**АККОРДЛЫ** *с.* Килешеү буйынса башҡарылған. *Аккордлы эш. Аккордлы эш хаҡы.*

**АККРЕДИТИ́В** [*рус.* 〈*фр.*] *и. фин.* Кемгә лә булһа аҡса түләү хаҡында берәй кредит ойошмаһының (банк йәки һаҡлыҡ кассаһынын) башҡа кредит ойошмаларына биргән рәсми ҡағыҙы. *Аккредитив биреү.*

**АККУМУЛЯ́ТОР** [*рус.* 〈*лат.*] *и.* Энергияны үҙенә туплап, кәрәк саҡта бирә торған ҡулайлама. *Аккумулятор батареяһы. Машинаға аккумулятор ҡуйыу.*

**АКР** [*рус.* 〈*ингл.*] *и.* Инглиз үлсәм системаһы йөрөгән илдәрҙә ҡулланылған ер үлсәү берәмеге (4047 $м^2$).

**АКРИХИ́Н** [*рус.* 〈*лат.*] *и.* Тапманы дауалау өсөн ҡулланыла торған синтетик дарыу.

**АКРОБА́Т** [*рус.* 〈*гр.*] *и.* Акробатика менән шөғөлләнгән кеше. *Совет акробаттары.*

**АКРОБАТИК** *с.* Акробатикаға мөнәсәбәтле. *Акробатик күнекмә. Акробатик номер.*

**АКРОБА́ТИКА** [*рус.* 〈*гр.*] *и.* Гимнастиканың һәм цирк сәнғәтенең бер төрө.

**АКСЕЛЕРА́ЦИЯ** [*рус.* 〈*лат.*] *и.* Балаларҙың, үҫмерҙәрҙең ғәҙәттәгенән шәберәк үҫеп, формалашыуы. *Акселерацияға бирелеү.*

**АКСЕЛЬБА́НТ** [*рус.* 〈*нем.*] *и.* Революцияға тиклемге Россияла һәм ҡайһы бер сит илдәрҙә: хәрбиҙәрҙең яурынына таға торған еҙ башлы уҡа бау. *Аксельбантлы мундир.*

**АКСИОМА** [*рус.* ⟨ *гр.*] *и.* Дөрөҫлөгө шикһеҙ булып, бүтән берәй теорияны иҫбатлау өсөн нигеҙ итеп алыиа торған ҡағиҙә.

**АКТ** [*рус.* ⟨ *лат.*] *и.* **1.** Ниҙе лә булһа раҫлап яҙған дәүләт йәки йәмғиәт әһәмиәтендәге документ. *Акт ҡағыҙы. Акт төҙөү. Акт яҙыу.* ■ *Мин.. көтөү-көтөү малды ҡабул итергә, ҡабул итеү актына ҡул ҡуйырға тейешмен.* Д. Юлтый./ Юридик әһәмиәте булған берәй эш-хәлде раҫлай торған документ. *Килешеү акты.* ■ *Судья .. гәйепләү актын уҡып сыҡты.* Х. Зарипов.

**2.** Уҡыу йорттарында, ғилми ойошмаларҙа үткәрелгән тантаналы йыйылыш. *Акттар залы.* ■ *Дәрес бөттө, ләкин берәү ҙә ҡайтырға ашыҡмай. Халыҡ акттар залына ағыла.* Т. Килмөхәмәтов.

**АКТЁР** [*рус.* ⟨ *фр.*] *и.* Спектаклдә, кинола ролде профессиональ башҡарыусы артист. *Актёр һәләте. Актёрҙар йорто. Актёр булыу.*

**АКТЁРЛЫҠ** *и.* Актер профессияһы. *Актёрлыҡ хеҙмәте. Актёрлыҡҡа уҡыу.*

**АКТИВ** [1] [рус. ⟨ *лат.*] *и.* Коллективтың, ойошманың иң алдынғы эшмәкәр өлөшө. *Класс активы. Колхоз активы. Партия активы.*

**АКТИВ** [2] [*рус.* ⟨ *лат.*] *и. бухг.* Предприятие балансының бөтә байлыҡ һәм мөлкәтте эсенә алған бер өлөшө.

**АКТИВ** [3] [*рус.* активный] *с.* Эшкә ихлас; алдын, эшмәкәр; *киреһе* пассив. *Актив эшсе.* ■ *Бөгөн ауыл хужалығына бер ҡасан да булмағанса актив, юғары профессиональ оҫталыҡ менән эшләрлек, новаторлыҡ һәләте булған кешеләр кәрәк.* «Совет Башҡортостаны», 1986, 26 февраль.//*Актив ҡатнашыу. Актив ҡулланыу.* ■ *Фронттан ҡайтҡас, ул [Аҡбулат] Кавказда яңы тормош ҡороу эшендә бик актив эшләгән.* З. Биишева.

**АКТИВИСТ** *[рус.] и.* Ойошманың, коллективтың алдынғы, эшмәкәр кешеһе. *Комсомол активисы. Профсоюз активисы.*

**АКТИВЛАНЫУ** *ҡ. ҡар.* **активлашыу.**

**АКТИВЛАШТЫРЫЛЫУ** *ҡ. төш. ҡар.* **активлаштырыу.**

**АКТИВЛАШТЫРЫУ** *ҡ.* Активлыҡты арттырыу, көсәйтеү. *Лекцияға әңгәмә элементтарын индереү .. уҡыусыларҙың иғтибарын активлаштыра.* М. Ғималова.

**АКТИВЛАШЫУ** *ҡ.* Актив төҫ алыу. *Һамаҡ жанры бигерәк тә иҫкелеккә ҡаршы көрәш ваҡытында ныҡ активлашып китте.* К. Мәргән./Активлыҡты көсәйтеү. *Партия ойошмаһының эше активлашты.*

**АКТИВЛЫҠ** [*рус.* <*лат.*] *и.* Эш-тормоштағы ихласлыҡ, эшсәнлек. *Ижади активлыҡ. Активлыҡ күрһәтеү. Активлыҡты күтәреү. Политик активлыҡты үҫтереү.*

♦ **Ҡояш активлығы** Ҡояш атмосфераһындағы ҡайһы бер күренештәрҙең (мәҫ. ҡояштағы тап, протуберанец һ. б.) регуляр барлыҡҡа килеүе. *1958 йылды ҡояш активлығы бик юғары булды, ә 1962 йылда был активлыҡ кәмеп, ерҙең өҫкө атмосфераһы һыуыны.* «Совет Башҡортостаны», 1965, 14 апрель.

**АКТОВЫЙ** [*рус.*]: **актовый зал** тантаналы йыйылыштар үткәрелә торған зал.

**АКТРИСА** [*рус.* <*фр.*] *и.* Актёр ҡатын-ҡыҙ; артистка.

**АКТУАЛЛЕК** *и.* Хәҙерге көн өсөн кәрәклек, мөһимлек. *Мәсьәләнең актуаллеге.*

**АКТУАЛЬ** [*рус.* актуальный] *с.* Көндәлек әһәмиәте ҙур, заман талабына ярашлы. *Актуаль мәсьәлә.* //*Азатлыҡ өсөн көрәш темаһы бөгөн дә бик актуаль яңғырай.*

**АКУЛА** [*рус.*] *и.* Оҙон йомро кәүҙәле, осло моронло эре йыртҡыс диңгеҙ балығы.

**АКУСТИКА** [*рус.* <*гр.*] *и.* **1.** Физиканың тауыш тәбиғәтен өйрәнә торған бүлеге.

**2.** Бүлмәлә тауыштың яңғыраш шарты. *Залдың акустикаһы.*

**АКУШЕР** [*рус.* <*фр.*] *и.* Акушерлыҡ эше менән шөғөлләнгән медицина белгесе.

**АКУШЕРЛЫК** *и.* **1.** Медицинаның ҡатындарға ауырлы саҡта һәм бала тапҡанда ярҙам күрһәтеү мәсьәләләрен өйрәнгән бүлеге.

**2.** Акушер хеҙмәте. *Акушерлыҡ менән шөғөлләнеү.*

**АКЦЕНТ** [*рус.* <*лат.*] *и.* Сит телдә һөйләгән саҡта өндәрҙең ихтыярһыҙҙан боҙоп әйтелеше. *Әфәндене башҡорт телендә асыҡ, ләкин ят бер акцент менән һөйләүе пләндағы башҡорт егеттәренә ҡыҙыҡ тойола. Ж. Кейекбаев.*

♦ **Акцент яһау** айырым бер фекергә йәки мәсьәләгә иғтибар йүнәлтеү, уға баҫым яһау. *Яҙыусы .. бәхетле донъяға булған ынтылышты тасуирлауға акцент яһай.* М. Минһажетдинов.

**АКЦИЗ** [*рус.* <*фр.*] *и.* Капиталистик илдәрҙә һәм революцияға тиклемге Россияла: ил эсендә һатылған тауарҙың хаҡы иҫәбенә индерелгән йәшерен налог.

**АКЦИОНЕР** [*рус.* <*фр.*] *и.* Акция хужаһы, акция менән эш итеүсе.

**АКЦИЯ** [1] [*рус.* <*фр.*] *и.* Капиталистик предприятиеға күпмелер пай индергәнлекте дөрөҫләп, уның эшен башҡарғанда һәм табышын бүлгәндә ҡатнашлыҡ итергә хоҡуҡ биргән ҡиммәтле ҡағыҙ. *Акция хаҡы.*

**АКЦИЯ** [2] [*рус.* < *лат.*] *и. кит.* Берәй маҡсат менән башҡарылған эш. *Дипломатик акция. Һуғыш акцияһы.*

**АКЦИЯЛЫ** *с.* Акция [1] нигеҙенә ҡоролған, акцияға нигеҙләнгән. *Акциялы йәмғиәт. Акциялы предприятие.* ■ *Был Башторг акциялы сауҙа йәмғиәтенә әүерелеп, шул исем менән эшләп ята.* «Совет Башҡортостанының ун йылы», 1929.

**АҠ** [1] *с.* **1.** Ҡар, һөт төҫөндәге; *киреһе* ҡара. *Аҡ төҫ. Аҡ кейем. Аҡ ҡағыҙ.* ■ *Ҡыш та килер, болондағы эҙебеҙҙе аҡ япмалар менән күмер.* Ғ. Рамазанов. *Ҡояш ҡына сыға ай әйләнеп, аҡ болоткайҙарға бәйләнеп* (Халыҡ йырынан)./ Шул төҫтәге нәмәләргә өҫтәмә аныҡлаусы итеп ҡулланыла. *Аҡ һөт. Аҡ ҡар.*

**2.** Үҫемлек, йәнлек атамаларының аныҡлаусыһы булып килә. *Аҡ төлкө. Аҡ уҫаҡ. Аҡ айыу Аҡ бәшмәк. Аҡ ҡуян.*

**3.** Ҡатмарлы төҫ исемдәренең бер өлөшө булып килә. *Аҡ күк. Аҡ һары.*

**4.** Ғәҙәттәгенән асығыраҡ төҫлө. *Аҡ тән.*/ Асыҡ төҫтәге тәнле. *Аҡ раса.*

**5.** Үҙ төҫөн юғалтҡан; сал. *Аҡ мыйыҡ. Аҡ сәс.*

■ *Аҡ һаҡаллы ҡарттың ерәнсәһе генә арыуҙы белмәй, ти* (Әкиәттән).

**6.** Эшләнеше, сифаты яғынан таҙа булып, асыҡ төҫ алып торған. *Аҡ тимер. Аҡ ҡалай. Аҡ мамыҡ.*

**7.** Ҡәҙерлегә тотола торған. *Аҡ өй. Аҡ келәт.*

**8.** *күсм.* Насарлығы, уҫаллығы булмаған; саф, изге. *Аҡ ниәт. Аҡ уй.* ■ *Тимер беләктәрең, аҡ теләгең табып бирер изге юл һиңә.* Б. Ишемғол./Кеше күңелен аңлатҡан һүҙҙәр менән килеп, рухи таҙалыҡты, сафлыҡты белдерә. *Аҡ йөҙ. Аҡ йөрәк.* ■ *Ирмен тигән егеттең әйтер һүҙе хаҡ булыр; күңеле уның аҡ булыр, яман эштән һаҡ булыр* (Ҡобайырҙан).

**9.** *күсм.* Шатлыҡ менән тулы; ҡыуаныслы. *Аҡ бәхет.* ■ *Хоҙаның бер аҡ көнөндә Һылыуҙы тағы күрҙем, бөтә донъямды онотоп, алдына башым эйҙем.* С. Кулибай.

**10.** *күсм.* Совет власының тәүге йылдарында: Совет власына ҡаршы булған; контрреволюцион. *Аҡ армия. Аҡ офицер.* ■ *Рәшәткә буйлап аҡ бандиттарҙың аттар янында маташҡандары күренә.* Һ. Дәүләтшина./*и. мәғ.* **аҡтар** Контрреволюцион ғәскәр.

**11.** *и. мәғ.* **аҡтар.** Шахмат, шашка уйынында асыҡ төҫтәге фигуралар.

**12.** *и. мәғ.* Аҡ төҫтәге нәмә. *Стенаның ағы.*

♦ **Аҡ икмәк** юғары сорт бойҙай оноnан бешерелгән икмәк. **Аҡты ҡара итеп күрһәтеү** *шул уҡ* **ҡараны аҡ итеп күрһәтеү** (*ҡар.* **ҡара** [1]). **Аҡты-ҡараны айырыу** *ҡар.* **айырыу. Аҡ күңелле** *ҡар.* **күңел** 1.

● *Аҡҡа ҡара тиҙ йоға.* Әйтем. *Ҡара кешенең тире сыҡҡансы, аҡ кешенең йәне сығыр.* Мәҡәл. *Уңған бисә — аҡ бәхет, уңмаған бисә — ҡаҡ бәхет.* Әйтем.

**АҠ** [2] *и.* Төрлө нәмәнең аҡ төҫ менән айырылып торған бер өлөшө. *Йомортҡаның ағы. Күҙҙең ағы.*

**АҠ** [3] *и.* Һөттән әҙерләнгән төрлө ашамлыҡ; һөт-ҡатыҡ.

● *Ағы барҙың туғы бар.* Әйтем.

**АҠ** [4] *и.* **1.** Ҡағыҙ, яҙыулы ҡағыҙ. *Әсәһе ҡайһы саҡтарҙа ҡыҙының былай гел уҡып ултырыуына эсе бошоп, орошоп та ала: «Күйһаңсы шул аҡҡа текләп, күҙ нуры бөтөрөп ултырыуыңды!»* Һ. Дәүләтшина.

**2.** Таҙа итеп күсереп яҙылған ҡульяҙма. *Планды аҡҡа күсереп яҙҙым.* Ж. Кейекбаев.

● *Аҡҡа төшкәнсә, ҡаҡҡа төш.* Әйтем.

**АҠ** [5] *и.* **1.** Күҙҙең ҡараһын ҡаплап һуҡырайтҡан шекәрә. *Аҡ төшөү. Аҡ һалыу.*

**2.** Тырнаҡҡа төшкән тап.

**АҠАЙ** *с. диал.* Аҡыш.

**АҠАЙТЫУ** *ҡ.* Ҙур итеп, ағын әйләндереп асыу (күҙҙе); аҡшайтыу. **Күҙҙе аҡайтыу** 1) күҙҙе ҙур асыу. *Фәхри .. күҙҙәрен аҡайтып, ауыҙын күбекләндереп, .. аҡыра башланы.* Б. Бикбай; 2) асыу менән ҡарау. *Мәүли яуап биреү урынына ҡустыһына күҙен аҡайтып ҡараны. Һаҙый шөрләп ҡуйҙы.* Р. Ғабдрахманов.

**АҠАЙЫУ** *ҡ.* **1.** Түңәрәкләнеп, ҙур булып асылыу (күҙгә ҡарата); аҡшайыу. *Бирешкән ти Арыҫлан: быуындары тартышҡан, ике күҙе аҡайған, .. тамам хәленән тайған.* Ш. Бикҡол.

**2.** Асыу менән ҡарау; аҡшайыу. *Әмирханов менән Хәйруллин өс көн рәттән аҡайып миңә өндәшмәй йөрөнө.* С. Агиш. **Аҡайып ҡарау** 1) ныҡ итеп ҡарау; 2) асыу менән ҡарау. *Аҫтан һөҙөп, аҡайып ҡарағас, Гәрәйҙе барыһы ла таныны.* Б. Бикбай.

♦ **Күҙе аҡайҙы** кешенең бик ҡурҡҡанын йәки аптырағанын белдергәндә әйтелә. *[Ерәнсә сәсән:] Ҡулымдағы һәнәкте күргәс, дейеүҙең күҙе аҡайҙы* (Әкиәттән). **Күҙе аҡайған** бер нәмәгә иҫе китеп, бик мауығып, бүтән нәмәне күрмәҫбелмәҫ булып торған кешегә әйтелә.

● *Аҡайған күҙҙә аҡыл юҡ.* Әйтем.

**АҠАНА** *и.* Ҡыяҡлылар ғаиләһенә ҡараған һепертке башлы бейек үлән.

**АҠАҢЛАУ** *ҡ. ҡар.* **алаҡанлау.**

**АҠВАБАЙ** [1] *и. диал.* Атайҙан оло ир кешегә хөрмәтләп әйткән һүҙ; олатай.

**АҠБАБАЙ** [2] *и. диал. ҡар.* **бәпембә** 1.

**АҠБАЛСЫҠЛАУ** *ҡ. һөйл.* Аҡ балсыҡ менән буяу; ағартыу. *Мейес .. ап-аҡ итеп аҡбалсыҡланған да йәшелле, күкле, ҡыҙыллы буяуҙар менән биҙәкләнгән.* Ғ. Дәүләтшин.

**АҠБАЛЫҠ** *и.* Һөмбаштар семьяһына ингән йылтыр аҡ тәңкәле эре яҫы балыҡ.

**АҠБАШ** [1] *и.* Роза сәскәлеләр ғаиләһенә ҡараған, аҡ йәки ал төҫтәге ойҡаш сәскәле, ҡауырһын япраҡлы уйһыу ер үләне.

**АҠБАШ** [2] *и.* **1.** Еүешлектән барлыҡҡа килгән тояҡ ауырыуы.

**2.** Йылҡының бәкәлен боҙа торған ҡорт.

**3.** Яман шешек, сиҡан. *Аҡбаш сығыу. Аҡбаш һытылыу.*

**АҠБАШ** [3] *и. һөйл.* Шешәле аҡ араҡы. *[Котлояр — Әхмәҙигә:] Ҡоҙа, ниңә берәр шешә аҡбаш алмайһың, әллә ҡоҙағыйҙан ҡурҡаһыңмы?* Һ. Дәүләтшина.

**АҠБУҘ 1.** *с.* Күкһел (ат төҫөнә ҡарата). *Аҡбуҙ аттар менеп, арҡаларҙа сахра гиҙҙем, йәмдәр тапманым* (Халыҡ йырынан).

**2.** (*баш хәреф менән*) *и.* Әкиәттәрҙәге толпар исеме. *Урал Аҡбуҙҙың өс бөртөк ҡылын өҙөп алды, ә Аҡбуҙ шунда уҡ юҡ та булды, ти.* «Урал батыр».

**АҠБУР** *и.* Аҡ төҫтәге йомшаҡ таш. *Аҡбур ташы.* ■ *Сәғиҙә аҡбур алды ла класс таҡтаһына .. яҙып ҡуйҙы.* М. Тажи./Шул таштың йортҡура ағартыу өсөн әҙерләнгән иҙмәһе. *Атаҡайымдың сыуалын аҡбур менән бурлайым* (Сеңләүҙән).

♦ **Аҡбур дәүере** *ҡар.* **дәүер** [3].

**АҠБУРЛАУ** *ҡ.* Аҡбур менән буяу; ағартыу.

**АҠГВАРДЕЕЦ** *и. ҡар.* **аҡгвардиясы.**

**АҠГВАРДИЯСЫ** *и.* Аҡ гвардия сафында Совет власына ҡаршы һуғышҡан кеше; контрреволюционер. *Владимир Ильич беҙгә Төркөстанды аҡгвардиясыларҙан азат итеү бурыстары тураһында һөйләне.* «Совет Башҡортостаны», 1966, 22 апрель.

**АҠҠАН-ТАМҒАН** *с.* Төрлө ерҙән әҙләп килгән (аҡса йәки башҡа нәмәгә ҡарата).// *Уғрыларҙы төшөрөп, шуларҙан аҡҡан-тамғанды йыйыштырып ятҡан ҡатындыр был.* Б. Бикбай.

**АҠ-ҠАРА: күҙенә аҡ-ҡара күренмәй** *йәки* **аҡ-ҡараны күрмәй** тирә-йүнде абайламай бик ашығып китеп барғанды йәки донъяны онотоп

берәй нәмә эшләгәндә белдергәндә әйтелә. *Бер нәмәне алға алған булһаң, ак-кара күренмәй күҙеңә.* Т. Йәнәби. *Рафик күҙенә ак-кара күренмәй магазинга сыгып йүгерҙе.* Ф. Исәнғолов.

**АҠКОЙРОК** *и.* Дымһыл ерҙә үҫә торған ялбыр башлы оҙон үлән. *Тал араһында .. аккойрок үләненең һирәк кенә һабактары .. күренә ине.* Й Солтанов.

**АҠКОШ** *и.* **1.** Өйрәктәр ғаиләһенә ҡараған аҡ төҫлө, һомғол оҙон муйынлы иң эре һыу ҡошо.

**2.** *эйл. ф.* **аҡкошом** Яратып, иркәләп әйтелә. *Мөхәббәттең сафын, ынйыларга хасын алып кил, аккошкайым.* Р. Янбулатова.

**АҠЛАН** *и.* Урман, ағаслыҡ араһындағы асыҡ ер. *Уралымды байка буйҙан буйга: һәр акланы уның шау сәскә.* М. Уразаев. *Алп батыр баҫкан ете аклан ошо ете ырыуҙың йәйләүе булып калган, ти* (Әкиәттән).

**АҠЛАНЫУ** [1] *к.* **1.** *төш. кар.* **аҡлау** [1] 1, 2.

**2.** *кайт. кар.* **аҡлау** [1] 2.— *Мин майҙы ашаганым юк! — тип акланырга тотона Төлкө* (Әкиәттән).

**3.** *күсм.* Ғәмәлгә ашыу, дөрөҫләнәү. *Акланган ышаныс. Өмөт акланыу.*

**АҠЛАНЫУ** [2] *к. төш. кар.* **аҡлау** [2]. *Акланган сәй.*

**АҠЛАУ** [1] *к.* **1.** Аҡҡа буяу, аҡ төҫ биреү; ағартыу. *[Гөлйөҙөм] ак балсык, бер көнәк эркет һыуы алып килеп, өйөнөң эсен акларга тотонде.* Һ. Дәүләтшина.

**2.** *күсм.* Ғәйепһеҙгә сығарыу, ғәйепһеҙ тип табыу. *Аклап калдырыу.* ■ *Мин үҙемде калайтып аклау тураһында уйлап йөгерәм.* Д. Юлтый./Нигеҙле йәки ғәфү итерлек тип иҫәпләү. *Ғәйепте аклау.*

**3.** *күсм.* Файҙалы, дөрөҫ итеп танытыу. *Аксалата түләү үҙен тулыһынса аклай.*

**4.** *күсм.* Эш менән раҫлау, дөрөҫкә сығарыу. *Ышанысты аклау.*

● *Ил өмөтөн ир аклай.* Әйтем.

**АҠЛАУ** [2] *к.* Һөт ҡушыу, һөт һалыу. *[Фәхри — катынына:] Бар, булмаһа, тарткылаштыр шул тарамышыңды. Бәлки, сәй акларык нәмә сыгыр.* Б. Бикбай.

**АҠЛАУ** [3] *к.* Аҡ төшөү (күҙгә ҡарата). *Күҙе аклаган.*

**АҠЛЫ** *с.* Аҡ төҫтәге (яулыҡ, күлдәк йәки тауарға ҡарата). *Аклы яулык.* ■ *Аклы ситса күлдәгемдең еңе тар беләгемә* (Халыҡ йырынан).

**АҠЛЫҠ** *и.* **1.** Сафлыҡ, таҙалыҡ. *Күңел аклыгы.* ■ *Афарин, их, донъяга шатлык килә; юйыла золмат, йылмайып аклык килә.* Ш. Бабич.

**2.** *диал.* Аҡлан.

**АҠМА** *и.* **1.** Көслө ташҡын булып аҡҡан ямғыр йәки ҡар һыуы. *Һыуҙар ага акма менән, әйләнмәгә бакма менән* (Халыҡ йырынан).

**2.** *диал. кар.* **боғаҙ** [2].

**АҠМАН-ТОҠМАН** *и.* Март уртаһыиан һуң була торған көслө буран. *Көн ныклап боҙолорга уйлай, ахыры. Бынан бер йыл элек тә акман-токман тип йөрөтөлгән буран шулай башланып киткәйне.* Я. Хамматов.

**АҠМАР** *и. диал. кар.* **акма** 1.

**АҠМЫЙЫҠ** *и.* Ҡыяҡлылар ғаиләһенә ҡараған тар, ҡаты ҡыяҡлы, нәҙек кенә һирәк башаҡлы күп йыллыҡ үҫемлек (урман яғындағы болондарҙа үҫә).

**АҠРАЙ** *с. диал.* Аҡыш.

**АҠРАЙТЫУ** *к.* Ҙур итеп, ағын әйләндереп асыу (күҙҙе); аҡайтыу. *Күҙҙе акрайтыу.*

**АҠРАЙЫУ** *к.* **1.** Ҙур булып асылыу (күҙгә ҡарата); аҡайыу.

**2.** Асыу менән ҡарау. *Төңөлдөк әбей акрайып бер караны ла, арты менән әйләнеп, үҙенең тәсбихын шылтыратырга тотондо.* Һ. Дәүләтшина.

**3.** Ап-асыҡ булып айырылып күренеп тороу. *Кара ерлектә акрайып күренгән тап.*

**АҠРАП** [*гәр.*] *и. кар.* **ғәҡрәп.**

**АҠРЫЙ** *с.* Ағы әйләнеп ҙур булып асылып торған; аҡыш. *Акрый күҙ.*

**АҠРЫМ** *бәйл. диал.* Саҡлы, тикле, ҡәҙәр. *Ни акрым ер киттек.*

**АҠРЫН** *с. кар.* **әкрен.**

**АҠСА** *и.* Алыш-биреште хаҡ бәрәмеге булып хеҙмәт иткән ҡиммәтле ҡағыҙ йәки металл. *Алтын акса. Көмөш акса. Бакыр акса. Кагыҙ акса. Ысын акса. Яңы акса. Ялган акса. Бер һум акса. Бер тин акса. Акса янсыгы. Аксага һатыу.* ■ *Кыҙрас ике йөҙ һум аксаны апаларына алып кайтып биргән, үҙе йәнә эш эҙләп сыгып киткән, ти* (Әкиәттән). **Еңел аҡса** анһаттан килгән күп аҡса. **Ҡул аҡсаһы** ваҡ-төйәккә тотоноу өсөн йөрөтөлә торған аҡса. **Урын аҡсаһы** баҙарҙа тороп һатҡан өсөн түләнә торған аҡса. *Шул аҙ-маҙ грамотаһы бар инде, баҙарҙа урын аксаһы йыя.* С. Агиш. **Аҡсаны көрәп алыу** күп аҡса алып эшләү. *[Байым — Йәмиләгә:] Атайың һинең бай. Буровой мастер. Аксаны көрәп ала.* К. Мәргән. **Аҡса тоғо** аҡса йыйып ятҡан кешегә ҡарата. **Аҡса төшөрөү** аҡса йүнләп алыу. **Аҡса түгеү** аҡсаны күпләп бушҡа тотоноу. **Аҡса эшләү** күп эшләп, аҡса табыу. *Әллә белгестәр өсөн былай яраймы? Белгес әллә көнләксө кеүек акса гына эшләйме?* С. Агиш. **Аҡса һуғыу** аҡсаны күпләп табыу. *Каһымбай акса һугыу тураһындагы комһоҙ уйҙарын тәүге көндән ук бойомга аткарырга кереште.* И. Ғиззәтуллин.

◆ **Аҡса ашау** хөкүмәт иҫәбенән даими түләнгән пособиены, пенсияны һ. б. алып тороу. **Баҡса емеше түгел, аҡса емеше** буштан килмәгән, хаҡ түләп алынған, тигән мәғәнәлә берәй нәмәне аяуһыҙ тотонған кешегә әйтелә. **Ике тин — бер аҡса** бер ни түгел, анһат тигән мәғәнәлә әйтелә.

● *Йөҙ һум аксаң булганса, йөҙ дуҫың булһын.* Мәҡәл.

**АҠСАБЫР** *и. диал.* Аҡ өйрәк (*кар.* **өйрәк 1**).

**АҠСАЙ** *и. диал.* Аҡ ябалаҡ (*кар.* **ябалаҡ**).

**АҠ-САЛ** *с.* Аҡ (күберәк сәскә йәки йөнгә ҡарата). *Ак-сал гына яурын, ала канат Урал гына тауҙың бөркөтө* (Халыҡ йырынан).

**АҠСАЛАТА** *р.* **1.** Аҡса көйө, аҡса менән. *Аксалата биреү. Аксалата түләү.* ■ *Колхоз ай һайын аксалата аванс бирә.* Х. Кәрим.

**2.** Аҡса иҫәбенә һалып, аҡсаға бәйләп. *Хеҙмәттең аксалата хакы. Аксалата иҫәпләү.*

**АҠСАЛЛАНЫУ** *к.* Аҡ төҫкә инеү; ағарыу. *Береһенән-береһе уҙҙырырҙай булып емелдәгән*

*йондоҙҙар аҡсаллана барып бер-бер артлы һүнделәр.* Т. Килмөхәмәтов.

**АҠСАЛЫ** *с.* **1.** Аҡсаһы булған, аҡсаға бай. *Аҡсалы кеше.* ■ *Хәҙер крәҫтиәндең аҡсалы сағы.* С. Агиш.

**2.** Түләүле, аҡсалата түләнгән./Көткәндән күберәк аҡса килтергән, аҡсаһы күберәк булған. *Аҡсалы эш.*

● *Аҡсалының эше күп, баҡсалының ашы күп.* Әйтем.

**АҠСА-МАЛ** *и. йыйн.* Байлыҡ, дәүләт.

**АҠСАРЛАҠ** *и.* Уртаса ҙурлыҡтағы, оҙон суҡышлы, ҡыйғас ҡанатлы, балыҡ менән туҡланған һыу ҡошо.

**АҠСЕЛӘН** *и. шул уҡ* **аҡ селән** (*ҡар.* **селән**).

**АҠСУҒА** *и.* Балыҡтың аталыҡ һөтө.

**АҠСУМҒЫС** *и. диал.* Тирҫаяҡ.

**АҠСӘПСЕК** *и. шул уҡ* **аҡ сәпсек** (*ҡар.* **сәпсек**).

**АҠСӘСКӘ** *и.* **1.** Ҡатмарлы сәскәләләр ғаиләһенә ҡараған, сәскәһенең уртаһы һары, тар-тар ғына таждары аҡ булған тетмәкәй япраҡлы үҫемлек.

**2.** *ҡар.* **елбәгәй** [2].

**АҠТА** *и. диал. ҡар.* **ҡаптал** 1.

**АҠТАМЫР** *и.* Ҡыяҡлылар ғаиләһенә ҡараған, таралып үҫкән оҙон аҡ тамырлы күп йыллыҡ үҫемлек. *Дала аҡтамыры. Ҡылсыҡлы аҡтамыр. Йөнтәҫ аҡтамыр. Үрмә аҡтамыр.*

● *Аҡтамыр атҡа булған үсен һабандан алыр.* Әйтем.

**АҠТАРТЫУ** *к. йөкм. ҡар.* **аҡтарыу**.

**АҠТАРЫЛЫУ** *к.* **1.** *төш. ҡар.* **аҡтарыу** 1.

**2.** Төбөнән әйләнеп ҡубыу; ҡуптарылыу. *Көслө ел-дауыл күтәрелеп китә. Ул арала булмай был тирәк, тамырынан аҡтарылып, диңгеҙгә ауа* (Әкиәттән).

**3.** Аҫты-өҫкә килеп ҡыйрау йәки боларыу; ҡутарылыу. *Аҡтарылып ятыу.* ■ *Һәүбән .. йәйләүенә ҡайтҡан. Ҡайтһа — бөтә тирмә аҡтарылып бөткән.* «Аҡбуҙат».

**АҠТАРЫНЫУ** *к.* Ҡаҙынып, соҡсоноп ниҙер эҙләү; ҡутарыныу. *Ул [Тимербулат] йүгереклэп, аҡтарынып, өйҙөң аҫтын-өҫкә килтерҙе.* Һ. Дәүләтшина.

**АҠТАРЫУ** *к.* **1.** Аҫтын-өҫкә килтереп ҡутарыу. *Өйҙә атайҙың китаптар менән тулған шүрлеген аҡтарып бөттөм бутап, ҡалдырманым әйтерлеген.* Ш. Бабич. *[Байғужа менән Буранбай] сумкаларын тағы ла аҡтарып .. нәмәләрен барлап рәткә килтерҙеләр.* Д. Юлтый. / Төптән ала туҙҙырып ҡыйратыу. *[Индрил:] Блиндажды снаряд аҡтарып ырғытты.* Д. Юлтый.

**2.** Төбө-тамыры менән йолҡоу. *Тотош тамырынан аҡтарып ташламаһаң, аҡтамыр бөтә ерҙе баҫа, игенде үҫтермәй.* Б. Бикбай. / Аҫтан уҡ ҡутарып боҙоу. *Әхмәҙулла бабай бураманың башын бөтөнләй аҡтарып алып ташланы.* Ә. Вахитов. / Береккән нәмәне тартып айырыу; ҡуптарыу. *Иҙән таҡтаһын аҡтарыу. /* Өҫкө ҡатламды боҙоп ҡутарыу. *Яҙын колхозсылар ҡырға сығыр, тракторҙар ялан аҡтарыр.* Х. Ҡунаҡбай.

**3.** Ҡатлы-ҡатлы нәмәне аралап, төрлө ерҙән ҡарау. *Китап аҡтарыу. Ҡағыҙ аҡтарыу.*

**4.** *диал.* Һоҫоу.

◆ **Донъя аҡтарыу** *шул уҡ* **донъя ҡуптарыу** (*ҡар.* **донъя**).

**АҠТАТЫР** *и.* Татырлы ер. *Ялан еркәйҙәре аҡтатыр, аҡтатырҡайҙарҙа мал ятыр* (Халыҡ йырынан).

**АҠТУРҒАЙ** *и.* Ҡарабаш турғайҙар ғаиләһенә ҡараған, ҡанат-ҡойроғо зәңгәрһыу, башҡа ере аҡ төҫтәге ваҡ урман турғайы.

**АҠТҮШ** *и. диал.* Һыу турғайы (*ҡар.* **турғай** 1).

**АҠТЫҠ 1.** *с.* Иң һуңғы, иң аҙаҡҡы. *Аҡтыҡ таяныс. Аҡтыҡ һыныҡты бүлеп биреү.* ■ *Айбулаттың әсәһе үлер алдынан .. аҡтыҡ тапҡыр башынан һыйпап һөйҙө лә васыят әйтте.* Һ. Дәүләтшина./Берҙән-бер, һуңғы. *Аҡтыҡ он.* ■ *[Өлкәман — Кәримгә:] Табырһығыҙ! Ана, аҡтыҡ башмағығыҙҙы тартып алырмын, мәгәр түләтермен.* Ш. Насыров./Аҙағына етеп килгән, әҙ генә ҡалған; һуңғы. *[Аҫылбикә:] Аҡтыҡ ғүмеребеҙҙе бергә уҙғарабыҙ тигәндә, тағы бәлә, тағы ҡайғы, тағы үкһеҙлек.* Т. Хәйбуллин.

**2.** *и.* Низең дә булһа һуңғы өлөшө, иң һуңы, иң аҙағы. *Икмәктең аҡтығы.* ■ *Ул үлем ҡоралдарын .. беҙ алып ҡулға, яһарбыҙ һәр һуғыштың аҡтығын.* Т. Йәнәби./*ҡусм.* Нимәнең дә булһа иң насары, иң йүнһеҙе. *Әҙәм аҡтығы.*

◆ **Аҡтығын ашағыры** ҡарғағанда әйтелә.

● *Ат аҡтығы илгә бүре килтерә.* Әйтем.

**АҠТЫҠҠЫ** *с.* Бөтөү кимәленә еткән; иң һуңғы, аҡтыҡ. *[Һалдат:] Аҡтыҡҡы көндәр, давай гулять итәбеҙ.* Д. Юлтый.

**АҠҺАЙ-ТУҠҺАЙ** *р.* Сатанлай-сатанлай; һылтыҡлап. *Ғәрифә [әбей] бөтә сабырлығын юғалтып, аҡһай-туҡһай Шакир ағай янына килде.* Ш. Шәһәр.

**АҠҺАҠ** *с.* Аяғы зәғиф булып, тигеҙ баҫа алмаған; сатан, һылтыҡ. *[Мифтах:] Әҙәмде әҙәм хур итер, күрә алмаһа; аҡһаҡ эт ятып өрөр, өрә алмаһа.* К. Мәргән. **Ҡара аҡһаҡ** йүнәлмәй торған аҡһаҡҡа әйләнгән (атҡа ҡарата).

● *Аҡһаҡ күп йөрөр, һуҡыр күп күрер.* Әйтем. *Көтөү боролғанда, аҡһаҡ һарыҡ алға сыға.* Әйтем.

**АҠҺАҠАЛ** *и.* **1.** Күпте күргән, күнте белгән оло кеше. *Түйға саҡырылған ҡунаҡтар килә башланы. Аҡһаҡалдар түргә [уҙҙы].* Ғ. Ғүмәр. /Берәй эш өлкәһендә оҙаҡ хеҙмәт итеп, тәжрибә, белем туплап, хөрмәт ҡаҙанған кеше. *Тел белеменең аҡһаҡалы.*

**2.** Ырыу башында торған хөрмәтле оло ир. *Аҡһаҡал илде афәттән ҡотҡарыу тураһында көнө-төнө уйланып, ырыуҙағы ир-егеттәрҙе йыя.* Ә Вахитов.

**АҠҺАҠЛАУ** *к.* Аҡһай-аҡһай атлау, аҡһай-аҡһай баҫыу; сатанлау, һылтыҡлау. *Рәхимә көймәнән көскә шыуып төштө, аҡһаҡлай-аҡһаҡлай .. күҙгалып, китә алмай туҡтаны.* Һ. Дәүләтшина.

**АҠҺАҠ-ТУҠҺАҠ** *с. йыйн.* Гел аҡһаҡ, йыйын аҡһаҡ. *Аҡһаҡ-туҡһаҡ аттар.*

**АҠҺАНЛАУ** *к. ҡар.* **аҡһаҡлау.** *Йыйылған халыҡ янына аҡһанлап Баймораt та килеп етте.* И. Көҫәнҡол.

**АҠҺАП-ТУҠҺАУ** *к.* Аҡһай-аҡһай саҡ баҫыу; һылтыҡлау. *Әле аяҡ бик ныҡ төҙәлеп*

етмәгән. *Аҡһап-туҡһап һыу буйына төшәм дә, тағы ҡайтып ятам.* Д. Юлтый.

**АҠҺАТЫУ** *к.* Имгәтеп, аҡһаҡ итеү; сатанлатыу. *Сәҙе генә буйы ай актатыр, ат аяҡайҙарын аҡһатыр* (Халыҡ йырынан).

**АҠҺАУ** *к.* **1.** Аяҡ ауыртып тигеҙ баҫа алмау; сатанлау. *Аҡһап йөрөү. Аҡһай башлау.*/Аҡһаҡ булып ҡалыу, аҡһаҡҡа әйләнеү. *Аяғы һынып аҡһау.*

**2.** *күсм.* Тейешле кимәлдә бармау (эш-хәлгә ҡарата). *Тәртип аҡһай. Эш аҡһай.* ■ *Быға ҡарап хеҙмәт ритмы аҡһаманы.* Ә. Байрамов. / Тейешле кимәлдә өлгәшә алмау; артҡа ҡалыу. *Ул математиканан аҡһай.*

**АҠҺӨЙӘК** *и.* **1.** Юғары ҡатлам кешеһе.

**2.** *күсм.* Эш яратмаған, артыҡ наҙлы кеше. *[Гөлбикә:] Ул [Гөлнур] ниткән аҡһөйәк? Өй йыйыштырмай, аш-һыу әҙерләмәй, гел ҡыйшанлауын белә.* Р. Ниғмәти.

**АҠҺЫЛ** *с.* Тоноҡ аҡ, аҡҡа тартым; ағылйым. *Аҡһыл тауар. Аҡһыл томан. Аҡһыл төҫ.* ■ *[Шәүәли] аҡһыл көл менән ҡапланып, һүрелә башлаған күҙҙарға текәлде.* Б. Бикбай./Ҡатмарлы төҫ атамаларының тәүге өлөшө булып килә. *Аҡһыл күк. Аҡһыл ҡара. Аҡһыл һары.* ■ *Поезд күперҙән сығыу менән аҡһыл ҙәңгәр төтөндәрен һауаға бөрктө.* С. Агиш.

**АҠҺЫЛЛАНЫУ** *к.* **1.** Аҡһыл төҫкә инеү. *Йәй таңы тиҙ атты. Ай яҡтыһы аҡһылланып нурын юйҙы.* Һ. Дәүләтшина.

2. Аҡһыл булып күренеү. *Алыҫта арыш баҫыуы аҡһыллана.*

**АҠҺЫЛЛАТЫУ** *к.* Аҡһыл төҫкә индереү; аҡһыл итеү. *Һалмаҡ-һалмаҡ ҡына аҡлыҡ йәйеп, аҡһыллатты ерҙе таң алды.* Б. Вәлит.

**АҠҺЫМ** *и. биол.* Тере матдәнең даими һәм иң мөһим өлөшө булып, төҙөлөш һәм функция нигеҙен тәшкил иткән ҡатмарлы органик матдә. *Үҫемлек аҡһымы. Аҙыҡтағы аҡһым.//Аҡһым матдәләр.*

**АҠҺЫМЛЫ** *с.* Аҡһымға бай, аҡһымы күп. *Аҡһымлы аҙыҡ.*

**АҠҺЫРҒАҠ** *и.* Ләлә һымаҡтар ғаиләһенә ҡараған, йыуан тамырлы, эре ҡабырсаҡ япраҡлы, йәшкелт һары йәки ҡара ҡыҙыл төҫтәге һепертке сәскәле, дымлы ерҙә үҫә торған ағыулы үлән. *Аҡ аҡһырғаҡ. Ҡара аҡһырғаҡ.*

**АҠҺЫУ** *с. ҡар.* **аҡһыл.**

**АҠШАЙТЫУ** *к.* Ҙур итеп, ағын әйләндереп асыу (күҙҙе); аҡайтыу, аҡрайтыу. **Күҙҙе аҡшайтып ҡарау** 1) күҙҙе ҙур асып, текләп ҡарау; 2) асыу менән йәки ғәжәпләнеп ҡарау.

**АҠШАЙЫУ** *к.* Түңәрәкләнеп, ҙур булып асылыу; аҡайыу.— *Ҡана майлыҡ бир! — тине ул [Гәрәй] бисәһенә аҡшайып.* В. Бикбай. **Аҡшайып ҡарау** 1) күҙҙе ҙур асып, текләп ҡарау; 2) асыу менән йәки ғәжәпләнеп ҡарау. **Күҙе аҡшайҙы** кешенең бик ҡурҡҡанын йәки аптырағанын белдергәндә әйтелә. *Мине күргәс, күҙе аҡшайҙы.* **Күҙе аҡшайған** бер нәмәгә иҫе китеп, ныҡ әүрәп, бүтән нәмәне күрмәҫ-белмәҫ булғанда әйтелә. *[Ҡунаҡбикә:] Ҡолансәстең тамам күҙе аҡшайған инде. Бер генә нәмәгә лә ҡарамай, сыға ла юғала, сыға ла юғала.* Д. Юлтый.

**АҠШАМ** *и.* **1.** Ҡояш байығандан ҡараңғы төшкәнгә тиклемге ваҡыт; эңер. *Аҡшам ваҡыты.* ■ *Ҡояш күҙҙән юғалды, булды аҡшам.* М. Ғафури.

**2.** Киске намаҙ. *Аҙан әйтә мәзин аҡшамға.* Ғ. Әмири.

**АҠШАНЛАУ** *к.* Тегеләй-былай башты борғолап, ян-яҡҡа күҙ ташлау. *[Мулла — бисәһенә:] Урамдан егет-улаҡ уҙыр хәл юҡ, күҙең-ҡашың аҡшанлап, ауҙҙың күтәреп, һүҙ ҡуша башлайһың.* Т. Хәйбуллин.

**АҠШАР** [1] *и. диал.* Аҡбур.

**АҠШАР** [2] *с. диал.* Аҡһыл һары сәсле, аҡ сәсле. *Аҡшар малай.*

**АҠШАРЛАУ** *к. диал. ҡар.* **ағартыу** 1.

**АКЪЯН** *и. диал. ҡар.* **ҡаҡыя** 1.

**АҠЫЙ** [1] *с. диал.* Аҡыш.

**АҠЫҠ** [*ғәр.*] *и.* **1.** Ҡыҙыл йәки ҡыҙғылт һары төҫтәге аҫыл таш. *Аҡыҡ ҡаш. Аҡыҡ төймә.* ■ *Унар ғына һумлыҡ ай ун аҡыҡ, һалдыр, егет, әйәр ҡашыңа* (Халыҡ йырынан). **Мөһөрлө аҡыҡ** йөрәк һүрәтенә килтереп, көмөштән бәләкәй генә ай, йондоҙ ҡуйып эшләнгән аҡыҡ ташы (ырым буйынса, йөрәк ауырыуынан дауа итеп ҡулланылған).

**2.** *диал.* Йөҙөк ҡашы.

**АҠЫЛ** [*ғәр.*] *и.* **1.** Кешенең фекер йөрөтөү, уйлау һәләте. *Аҡылға бай. Аҡылы теүәл.* **Аҡылы ҡыҫҡа** (*йәки* **һай**) аҡылы етешмәй, аҡылһыҙ. *Булмаһа әгәр һиндә аҡыл ҡыҫҡа, ышанма асылы нәжес залим дуҫҡа!* М. Ғафури. *Мостафа ла мулла .. бай булһа ла, аҡылы бик һай икән, кәрт уйнатып ҡыҙын отторған* (Халыҡ йырынан). **Аҡыл эйәһе** 1) аҡылы күп, аҡылға бай кеше. *[Михаил — Айбулатҡа:] Һине мин бер аҡыл эйәһе менән таныштырайым. Ул һинең бөтә һорауҙарыңа яуап бирер, күп нәмәгә төшөндөрөр.* Һ. Дәүләтшина; 2) *көлк.* хәйләкәр. **Бала аҡылы** фекер йөрөтөүҙә балаларға хас еңеллек. *Бала аҡылы инеү.* ■ *Байтаҡтан бирле һаҡал-мыйыҡлылар рәтендә йөрөһәм дә, минең үҙемдән дә бала аҡылы китмәгән.* Р. Низамов. **Ятыр аҡыл** оҙаҡ, ныҡ уйлап, шунан һуң ғына бер фекергә килә алыу һәләте. **Аҡылға зәғиф** аҡылы теүәл түгел. **Аҡыл өләшкәндә өйҙә булмаған** *йәки* **аҡыл өләшкәндә мейес артында ҡалған** *мыҫҡ.* аҡылһыҙ, аҡылы камил түгел тигән мәғәнәлә әйтелә./Яҡшыны, насарҙы айырыу, дөрөҫ эш итә белеү һәләте. *Аҫыл ғына ирҙәр тырышып йөрөр эшләйем тип аҡыл ҡушҡанын* (Халыҡ йырынан). **Аҡыл һалыу** яҡшы уй-фекерле итеү, аҡыллы итеү. *Егерме йәш — йөҙ алтын: билемә ҡылыс таҡтың; егерме биш — биш алтын: башыма аҡыл һалдың* (Ҡобайырҙан).

**2.** Берәй нәмәгә, эш-хәлгә ҡарата булған уй, фекер. *Аҡыл һорау. Яҡшы аҡыл килде.* ■ *[Ҡормой:] Бына Шатморат та килгән, кәңәшләшеп ҡарайыҡ. Бәлки, берәй аҡыл табылыр.* Б. Бикбай.

◆ **Аҡыл(ға) алыу** *ҡар.* **аҡылға ултырыу** 1. **Аҡыл булыу** ҡабат улай итмәҫкә һабаҡ булыу. *Тимер уға [Булатҡа] ҡатыраҡ бәрелде, бугай. Ярар, аҡыл булыр.* Б. Бикбай. **Аҡылға бер төрлө** (*йәки* **еңел**) ахмағыраҡ, уйлау һәләте түбән. *[Рәхимә:] Әллә һин, оло ул, аҡылға бер төрлө булып бараһың инде.* К. Кинйәбулатова. **Аҡылға**

кнлеү 1) иҫкә килеү, иҫте йыйыу. *Һибәт ағайҙы күреүгә шашып,.. аңымдан ҡалдым. Сәй янында ғына аҡылыма килдем.* Д. Юлтый; 2) дөрөҫ юлға баҫыу, тәртиплегә әйләнеү. *Бер бәләгә осрамайынса, аҡылға килмәҫ инде ул.* **Аҡылға ултырыу** 1) ҡабат улай итмәҫлек һабаҡ алыу; 2) аҡылһыҙлыҡты ташлау, аҡыллыға әйләнеү. *[Сынбулатов:] һа, егет, аҙыраҡ аҡылға ултырған икән .. Күптән шулай кәрәк ине.* М. Тажи. **Аҡылға һалыу** баш менән уйлау, фекер йөрөтөү. *Бабсаҡ әйтте: «Инде, ханым, ҡайһы билге раҫлығын тикшерә күр аҡылыңа һалып»,— тине.* «Бабсаҡ менән Күсәк». **Аҡылға һыйыу** *кубр. юкл.* күҙ алдына килтерерлек, аңларлыҡ булыу. *Был — шундай тупаҫ, аҡылға һыймаған бер приказ.* Д. Юлтый. **Аҡылдан шашыу** (*йәки* **яҙыу**) 1) дөрөҫ фекер итә алмаҫлыҡ хәлдә ҡалыу, уйлау һәләтен юғалтыу; 2) ғәҙәттәге тәртип кимәленән сығыу. *Аҡылдан шашып бейеү. Аҡылдан яҙып яратыу.* **Аҡылды йыйыу** уйлау, уйлап эш итеү.— *Әгәр ҙә аҡылыңды йыймай эшләй торған булһаң, беҙ быны һиңә буш ебәрмәбеҙ!* Ғ. Дәүләтшин. **Аҡылды йөрөтөү** фекер һәләтлеген эшләтеү. *Дейеү үҙенең ун ике башындағы барлы-юклы аҡылын йөрөтөп уйлағанса, көн үтеп, кис булған, ти* (Әкиәттән). **Аҡылды юйыу** уйлау һәләтен юғалтыу, аҡылһыҙланыу. **Аҡыл етеү** берәй эш-хәлде уйлап еткереү; баш етеү. *Тал-сыбыҡтай һомғол буй-һыныңды, күҙҙәреңдең зәңгәр ялҡынын нисек күрмәҫкә һуң, күҙем булып? Әйтсе, һылыу, етмәй аҡылым!* Р. Ғарипов. **Аҡыл инеү** (*йәки* **кереү**) уйлап эш итергә өйрәнеү, аҡыллыға әйләнеү. *Донъя күрмәй аҡыл инмәй ата балаларына* (Халыҡ йырынан). **Аҡыл итеү** уйлап хәл итеү. *Инде ни аҡыл итергә? Хәҙер бабай Ҡарасайҙы тоҡҡа һалып, әлеге урманға алып китә* (Әкиәттән). **Аҡыл йөрөтөү** уйлау, фекер итеү. **Аҡыл өйрәтеү** кәңәш, өгөт-нәсихәт биреү. *Егет ете ҡыҙ араһынан гел генә аҡыл өйрәтеп, эште уң иткән баяғы ҡыҙҙы һайлап алды, ти* (Әкиәттән). **Аҡыл төшөү** берәй уй, фекер килеү. **Аҡыл ултырыу** аҡылланыу, аҡыллараҡ булыу. *Бәлки, беҙгә аҡыл ултыралыр ғүмер үткән һайын.* М. Кәрим. **Аҡыл һатыу** аҡыллы һүҙ һөйләп маташыу. *Студент Сөләй байтаҡ ҡына аҡыл һатҡан иҫерек баш менән.* Б. Вәлит. **Аҡылы алтын [икән]** *көлк.* мөмкиндән артыҡ бер нәмә һораған, теләгән кешегә әйтелә. *Ай-һай, аҡылың алтын икән, һинән элек үҙем алыр инем әле ул аҡсаны.* **Аҡылы аяҙлы-болотло** (*йәки* **инәле-сығалы**) холҡо бер төрлө түгел, әле аҡыллы һымаҡ, әле ахмаҡ. **Еңел аҡыл** төптән уйлап еткерелмәгән, ҡыҙыулыҡ һөҙөмтәһе булған фекер. **Ҡара аҡыл** белемдән түгел, тормош тәжрибәһенән килгән фекер. **Ярты аҡыл** уйлау һәләте камил булмаған кеше; иҫәр.

● *Аҡыл — йәштә түгел, башта.* Әйтем. *Ир аҡылы — бер алтын, ил аҡылы — мең алтын.* Мәҡәл. *Матурлыҡ түйҙа кәрәк, аҡыл көн дә кәрәк.* Әйтем. *Иртәнге аҡыл кискә ярамай.* Әйтем.

**АҠЫЛ-КӘҢӘШ** *и. йыйн.* Төрлө фекер, төрлө уй. *Аҡыл-кәңәш биреү. Аҡыл-кәңәш ҡороу.*

**АҠЫЛЛАНЫУ** *к.* **1.** Аҡыллыға әйләнеү. *Аҡылланып китеү.*

**2.** *кусм.* Ҡаты һабаҡ алып насар ҡылыҡтан тыйылыу.

**АҠЫЛЛАШЫУ** *к.* Фекер алышыу, кәңәшләшеү, аҡыл-кәңәш бирешеү. *Был дүрт батыр бер-беренә яҡынлашты, йыртҡысҡа китмәк булып аҡыллашты.* «Бабсаҡ менән Күсәк». *Аҙаматтар килгән түй күрергә, аҡыллашып, кәңәш итергә.* М. Буранғол.

**АҠЫЛЛЫ** *с.* **1.** Уйлап эш итә белеүсән; фекере камил, аңлы. *Аҡыллы кеше.* ■ *Аҡыллы ла егет ай шул булыр, һөйләмәҫ ул кеше ғәйбәтен* (Халыҡ йырынан)./Тиҙ аңлаусан, аңлы (хайуанға һәм ҡоштарға ҡарата). *Аҡыллы эт.*/Аҡылды сағылдырған. *Аҡыллы ҡараш. [Һөнәрсенең] аҡыллы, уйсан күҙҙәрендә тәрән моң .. сағылған.* З. Биишева.

**2.** Дөрөҫ фекер йөрөтөүҙең һөҙөмтәһе булған, дөрөҫ уйланған. *Аҡыллы кәңәш. Аҡыллы тәкдим. Аҡыллы һүҙ.*//*Аҡыллы һөйләү.*

**3.** Тәртибе, ҡылығы матур; тыйнаҡлы, тәртипле. *Аҡыллы бала. Аҡыллы ҡыҙ.*

◆ **Аҡыллы баш** *көлк.* мөмкин булмаған нәмә һораған йәки теләгән кешегә әйтелә. *[Хәҙрәттең һүҙен] ишеткәс, һалдаттар ғеү килеп .. көлөшә башлай: «Ай-һай, хәҙрәт, аҡыллы баш икәнһең!»* В. Исхаҡов.

● *Иҫәр дуҫтан аҡыллы дошман яҡшыраҡ.* Мәҡәл.

**АҠЫЛЛЫЛЫҠ** *и.* Уй-фекер камиллығы, аңлылыҡ. *Баланың аҡыллылығына иҫең китер.*

**АҠЫЛҺЫҘ** *с.* **1.** Уйлап эш итә белмәгән; алйот. *Аҡылһыҙ кеше.*

**2.** Дөрөҫ фекер йөрөтмәүҙең һөҙөмтәһе булған, дөрөҫ уйланмаған. *Аҡылһыҙ һүҙ. Аҡылһыҙ эш.*

**3.** Тәртибе, ҡылығы насар; тыйнаҡһыҙ, тәртипһеҙ. *Аҡылһыҙ бала.*

● *Аҡылһыҙға аҡыл бирһәң, ҡысҡырып көлөр.* Мәҡәл.

**АҠЫЛҺЫҘЛАНЫУ** *к.* **1.** Аҡыл йөрөтөү, фекерләү һәләтен юғалтыу; алйотланыу.

**2.** Ныҡлап уйламай, еңел генә уйлап эш ҡылыу.

**АҠЫМ** *и. диал.* Ҡуян үрте (*ҡар.* **үрт**).

**АҠЫН** *и.* Ҡаҙаҡ, ҡырғыҙ һәм ҡарағалпаҡтарҙағы халыҡ сәсәне; үлән әйтеүсе. *Мәскәүҙе маҡтай шағирҙар, йырсылар йырлай уны, аҡындар, ашуҡ, сәсәндәр хөрмәтләп ҙурлай уны.* Р. Ниғмәти.

**АҠЫРТЫН** *р. диал.* Аҡрын.

**АҠЫРТЫУ** *к.* Яман итеп ҡысҡыртыу; баҡыртыу. *Әфисәр кәзәне мунсаға килтерергә ҡушҡан. Ярай, килтергәндәр. Шунан ул кәзәне аҡыртып туҡмай башлаған* (Әкиәттән).

**АҠЫРЫНЫУ** *к.* Асыу менән кешегә ҡысҡырыу; екеренеү. *[Котлобай] револьверын әле тәҙрәгә, әле часовойҙарға һелкеп һүгенә, аҡырына.* Һ. Дәүләтшина.

**АҠЫРЫП-БАҠЫРЫУ** *к.* Бик яман ҡысҡырыу. *Кәмәр әбей аҡырып-баҡырып Ғәләүҙе ҡыуа башланы.* Т. Йәнәби.

**АҠЫРЫУ** *к.* Яман тауыш менән ҡысҡырыу. *[Прапорщик:] Ул ниндәй тауыш!? Кемдәр ул аҡыра.* Д. Юлтый./Асыуланып яман ҡысҡырыу;

екереү./Яман ҡысҡырып илау. *Аҡырып илау.* ■ *Ул [Сания] тағы ла аҡырырға тотонды. Иланы-иланы ла,.. бүлмәнән сығып китте.* М. Тажи.

● *Аҡырған башлыҡ түгел, аҡылы бар башлыҡ.* Әйтем.

**АҠЫРЫШЫУ** *к. урт. ҡар.* **аҡырыу.**

**АҠЫШ** *с.* Ҙур булып, ағы күренеп торған (күҙгә ҡарата); аҡрый. *Сөнәгәттәрҙең дә бер аҡыш күҙле ҡонандары бар ине.* Ҡ. Ибәтуллин.

**АҠЫЯ** *и.* **1.** Ҡуңыр ҡаиатлы, сыбар ғына ҡыҙғылт түшле ваҡ турғай. *Йәйге ҡунаҡтар китеүгә, һыуыҡ яҡтарҙан буран турғайы, аҡыя, ҡыҙылтүш һымаҡ ҡошҡы ҡунаҡтар килеп етә.* Ә. Чаныш.

**2.** *диал.* Ҡыҙылтүш.

**АЛ** [1] *и.* **1.** Низең дә булһа йөҙө ҡараған тараф; *киреһе* арт. *Ал менән барыу. Ал менән бороолоу. Ал менән тороу.//Ал яҡ.* ■ *Биленә таҡҡан ҡылысың — Урал батыр ҡылысы; алдыңда урман торғанда, юлың йылға булғанда, урманын да, һыуын да айыра ярған ҡылыс ул.* «Аҡбуҙат»./Низең дә булһа йөҙө ҡараған тараftағы яҡын ер. *Ҡапҡа алды. Ҡыуыш алды. Ҡапҡа алдын һепереү.* ■ *Шәүрә һылыу, һинең алдарында шәм милтәһе булып та янайым* (Халыҡ йырынан).

**2.** Низең дә булһа йөҙө ҡараған яҡтағы өлөшө. *Арбаның алды. Күлдәктең алды.//Ал күсәр. Ал төрән.*

**3.** Берәй эш-хәл башланыуҙан элекке ваҡыт. *Байрам алды. Туй алды. Урак алды.*

**4.** 3-сө зат эйл. һәм төб., у.-в., сыҒн. клш. аффикстары менән бәйләүес функцияһында ҡулланыла (*ҡар.* **алдына, алдынан, алдында**).

♦ **Ал биреү** ярышта, көрәштә еңелеү, башҡаларҙы үҙендән уҙҙырыу. *Ал бирмә күмәк эштә ярышҡанда, ат менеп, дошман менән алышҡанда.* Ғ. Әмири. *Ҡола ҡашҡа ал бирмәҫ йүгерек булып сыҡты.* С. Кулибай. **Алға алыу** (*йәки* **ҡуйыу**) маҡсат итеп ҡуйыу. *[Өмәт] бер эште алдына алһа, осона сыҡмай тороп туҡтамай, көн саба, төн саба, аҙап сигеп йөрөй торғас, бер нәмәһен килтереп сығара торған кеше.* Д. Юлтый. **Алға килеү** ғәмәлгә ашыу, күрәһенә булыу. *[Ҡарлуғас:] Белмәйем инде, бығa тиклем бер генә көткәнем дә алдыма килгәне юҡ шул.* Б. Бикбай. **Алға сығыу** эш-ярышта уҙыу. **Алға һөрөү** ғәмәлгә ашырырға тырышыу. **Алдан ҡалғанса ашау** туйғанса ашау. *Байҙар, кәйеф-сафа ҡороп, алдарынан ҡалғанса тәмле-татлы ғына ашап йәшәй бирә.* Ж. Кейекбаев. **Алдан уҙыу** эшкә, тормошҡа арҡыры төшөү. *Ҡулыңдағы ҡылысың ай һынмаһын, алдарыңдан дошман уҙмаһын* (Халыҡ йырынан). **Алда тотоу** күҙҙә тотоу, маҡсат итеп ҡуйыу. **Алдынан арты яҡшы** (*йәки* **хәйерле**) киткәне яҡшы, эйҙә китһен, тигән мәғәнәлә әйтелә. *[Нурый:] Алдығыҙҙан артығыҙ аҡшы, һеҙҙән башҡа ла тора белербеҙ әле.* А. Таһиров. **Алдына сығыу** эштә, һөнәрҙә, ярышта кемделер еңеү, уҙыу. *Ул [Буҙансы батыр] тирә-яҡта иң көслө көрәшсегә әйләнгән, бер батыр ҙа уның алдына сыға алмаған* (Әкиәттән). **Ал яулау** кешенән уҙҙырырға тырышыу. *[Ҡусәрбай] ал яуланы, ләкин кеше төҫлө бер донъя рәхәте күрмәне.* Т. Хәйбуллин. **Бер алдына, биш артына төшөү** (*йәки* **сығыу**) юхаланып, кешенең күңелен ауларға тырышыу. *[Әхсән:] Прилавка өҫтөн тауар менән тултырып ташла, берен оҡшатмаһалар, икенсеһен .. маҡта, һыла-һыйпа, алыусының бер алдына, биш артына төш.* Х. Ибраһимов. **Үҙ алдына** 1) үҙенән-үҙе, үҙлегенән-үҙе. *Гөлйөҙөм ҡурҡышынан да, шатлығынан да һуҡҡан йөрәген баҫып, үҙ алдына йылмайҙы.* Һ. Дәүләтшина; 2) үҙ аллы, үҙе. *[Йәлмырҙа:] Балаҡайҙарым! Инде ир еттегеҙ, үҙ көнөгөҙҙө үҙегеҙ күрерлек, үҙ алдығыҙға донъя көтөрлөк булдығыҙ* (Әкиәттән).

● *Ал тәгәрмәс ҡайҙан тәгәрләһә, артҡыһы ла шунан тәгәрләй.* Әйтем. *Ата-әсәңә ни ҡылһаң, алдыңа шул килер.* Мәҡәл.

**АЛ** [2] *и.* Бесән, иген эше башҡарғанда бер кеше иңләп барған аралыҡ. *Тарыраҡ ал,— тинең,— алынды, .. йөҙөн йәнсей күрмә салғыңдың.* Р. Ғарипов.

**АЛ** [3] *с.* Аҡһыл ҡыҙыл, асыҡ ҡыҙыл. *Ал байраҡ. Ал яулыҡ. Ал таң. Ал нур. Ал сәскә. Ал таң. Ал шәфәҡ.* ■ *Ал еләнем тектергәнһең, ябыныр өсөнмө, атаҡайым* (Сеңләүҙән).

♦ **Ал да гөл** шәп, бик һәйбәт. *Беҙҙең эштәр шунда уҡ ал да гөл булып китте.* Д. Исламов.

**АЛА** [1] *с.* Аҡ менән ҡара йәки башҡа төҫ аралашҡан. *Ала ат. Ала ҡаҙ. Ала һыйыр. Ала эт. Ерән ала. Күк ала. Ҡара ала. Ҡола ала. Ҡыҙыл ала.*

♦ **Ала ҡар** *ҡар.* **ҡар. Ала таң** *ҡар.* **таң** [1]. **Ала ла, ҡола ла** *ҡар.* **ҡола** [1].

● *Аттан ала ла тыуа, ҡола ла тыуа.* Әйтем.

**АЛА** [2] *бәйл.* Сығанаҡ килештәге исемдәр менән килеп, «тәңгәл», «тотош» тигән мәғәнәне бирә. *Баштан ала ябыныу. Билдән ала батыу.*

**АЛАБАЙ** *и.* **1.** (*баш хәреф менән*) Эт исеме./*кусм.* Эт. *Тик йоҡоһо ҡасҡан алабайҙар абалайҙар алыҫ-алыҫта.* Р. Ғарипов.

**2.** *с. мәғ. кусм. һөйл.* Ябай, бер ҡатлы. *Алабай кеше.*

**АЛАБАЛЫҠ** *и.* Һөмбаштар төркөмөнә ингән йылтыр аҡ тәңкәле, ҡара һыртлы, затлы, төньяҡ сөсө һыу балығы.

**АЛАБАРМАН** *с.* Эш-ҡылыҡта иғтибарһыҙ, һаҡһыҙ, ҡабалан.— *Минең ҡартым алабарман бит ул, күҙен алған күгәүен кеүек,— тине Кәримә еңгәй.* С. Кулибай.

**АЛАБАРМАНЛАНЫУ** *к.* Иғтибарһыҙ, һаҡһыҙ ҡыланыу, алабарман булыу.

**АЛАБАРМАНЛЫҠ** *и.* Алабарман кешегә хас сифат. *Алабарманлыҡ күрһәтеү.*

**АЛАБУҒА** *и.* Сәнеске ҡанатлылар төркөмөнә ингән йәшкелт ала тәнле, ҡыҙыл ҡанатлы, һырты сәнскеле йыртҡыс балыҡ. *Диңгеҙ алабуғаһы. Йылға алабуғаһы.*

**АЛАБУТА** *и.* **1.** Сыбар һабаҡлы, ваҡ ҡына йылтыр орлоҡло, тарбаҡ һабаҡлы сүп үләне. *Бейек алабуталар, әремдәр араһынан саҡ ҡына күренеп ултырған бәләкәй бер өй генә йоҡламай.* З. Биишева./Шул үҫемлектең орлоғо. *Алабута ашау.*

**2.** *диал.* Мысай.

● *Алабута аш имеш, алтын-көмөш таш имеш.* Әйтем.

**АЛАБЫРТЫУ** *к. диал.* Албырғатыу.

**АЛАБЫРЫУ** *к. диал.* Албырғау.

**АЛАҒАЙЫМ** *с.* Кәрәкһеҙ, файҙаһыҙ, буш. *Көн дә яныр инем, яҙыр инем — алағайым уйын оҡшамай.* Б. Бикбай.

**АЛАҒАЙЫМҒА** *р.* Һис кәрәкһеҙгә, бушҡа; алъюҫыҡҡа. *Алағайымға йөрөү.* ■ *Ана, бүрәнә башында ауылдың эшһеҙ .. елғыуарҙары алағайымға Ҡыҙрасты һүгә.* Т. Йәнәби.

**АЛАҒАНАТ** [1] *и.* **1.** Күкһел түбәле, күрән ҡыҙыл түшле, ала ҡанатлы турғай (инәһе буҙ).

**2.** *диал.* Шыршы турғайы (*кар.* **турғай**).

**АЛАҒАНАТ** [2] *и. һөйл.* Еңел тормош эҙләп, төрлө ерҙә йөрөгән елғыуар кеше.— *Һин бит алағанат, летун, бисәңдең елкәһен кимереп ятаһың.* М. Тажи.

**АЛАДОРМАН** *с. диал.* Ярһыу. *Аладорман ат.*

**АЛАЙ** [1] *и. иҫк.* Дивизия йәки бригада составына инә торған ғәскәри бүлем. *Йөрәктау янына ебәрелгән Хохловтың полкын пыран-заран килтергәс, улар [башҡорттар] үҙҙәренең алайҙары менән Өфөгә йүнәлде.* Ғ. Ибраһимов.

**АЛАЙ** [2] *р. һөйл.* Улай.

**АЛАҠАЙ** *с. кес.* **кар. ала** [1] 1.

**АЛАҠАЙЛАНЫУ** *к.* Алан-йолан итеп, тегеләй-былай һуғылыу; ҡуҙғыу. *Бындай ваҡытта халыҡтың алаҡайланып йөрөүенең берәй мәрәкәһе була уның. Керенский ҙа бит, Питерҙа большевиктар .. ҡыҫырыҡлай башлағас, койроғон бот араһына ҡыҫтырып ҡаскан.* А. Таһиров.

**АЛАҠАН** *и.* Ус эсе, ус аяһы. *Ҡаҙаҡ куйының оса майы ус алаҡанындай итеп ҡырҡылған да ҡулламаның өҫтөнә өймәләмә итеп һалынған.* Ғ. Дәүләтшин.

**АЛАҠАНЛАҠ** *с.* **1.** Алан-йолан итеп, суҡанлап торған.

**2.** Теләһә кемгә күҙ йүгертеп барған (күберәк ҡатын-ҡыҙға ҡарата).

**АЛАҠАНЛАУ** *к.* Тирә-яҡҡа алан-йолан ҡарау. *[Үгеҙ] шундай яман итеп үкереп ебәрҙе, хатта ҡуләгәлә тыныс ҡына көйшәп ятҡан һыйырҙар ҙа урындарынан тороп, алаҡанлай башланы.* Н. Ғәлимов.

**АЛАҠАС: алаҡас турғай** *кар.* **турғай** 1.

**АЛАҠЛАУ** *к.* Ала итеү, ала-сула итеү.

**АЛА-ҠОЛА** *с.* Төрлө төҫ аралашҡан, сыбар. *Ала-ҡола кейенгән кешеләр.* ■ *[Ҡолой:] Ул ерҙәр бер ҙә генә урған ергә оҡшамаған, ҡаҙ ашаған шикелле, ала-ҡола булып ята.* С. Мифтахов.

**АЛАҠСЫН** *и.* Башҡа төҫ өҫтөндәге аҡ тап.

**АЛАҠ-ҺУЛАҠ** *с. диал.* Ала-сула. *Алаҡ-һулаҡ яҡтыла уның [әбейҙең] сырышып бөткән сырайы гәжәп ҡырыҫ .. һымаҡ күренде миңә.* Н. Мусин.

**АЛАҠ-ШАҠАЛАЙ** *и.* Малайҙар, егеттәр уйнай торған уйын (уйнаусылар икегә бүленә; бер төркөмө, билдән бөгөлөп, тотоношоп, бер-бер артлы баҫа; икенсе төркөмдәгеләр уларҙың өҫтөнә һикереп ултыра; аҫтағылар йығылмаһа, икергәндәре улар урынына баҫа); шап-шаҡыр.

**АЛАЛАНЫУ** *к.* **1.** Ала төҫкә инеү, алаға әйләнеү.

**2.** Ала булыу. *Нарыш-тау итәгендә .. алаланып ар ята.* Ә. Вәли.

**АЛАЛАУ** *к.* Ала итеү, алаға әйләндереү. *Йылҡыны ҡорсаңғылай алалаған.* Аҡмулла.

**АЛАЛЫ-ҠОЛАЛЫ** *с. кар.* **ала-ҡола.**

**АЛАМА** [1] *с.* **1.** Иҫкереп туҙған, тишек-тошоҡ, йыртыҡ. *Алама бүрек. Алама ҡулдәк. Алама сепрәк.//Алама кейенеп йөрөү.* ■ *Ғәлимә еңгә, үҙе менән бергә ғүмер иткән алама юрғанын асып, аҡрын ғына торҙо ла, мейес эсенән быймаһын алып кейҙе.* Б. Ишемғол. *Әсәй картая, алама булһа ла өй бар. Ҡайтырға, колхозға кереп, хужалыҡты рәткә һалырға, әсәйҙе карарға кәрәк.* Б. Бикбай./Туҙған иҫке кейемле. *Байлыҡ ул бер көнлөк. .. Алама булһаҡ та, һәпрәйеп йөрөһәк тә, беҙҙең кәрәгебеҙ тейер.* Т. Хәйбуллин./*и. мәг.* Туҙған, йыртылып бөткән кейем-һалым. *Кулдәк аламаһы.*

**2.** Насар, яман. *Алама гәҙәт.*/Насар холоҡло. *Алама кеше.*/Насар, күңелһеҙ. *Алама хәбәр. Алама ваҡиға.*/Төҙәлмәй торған, ҡурҡыныс. *Алама сир.* ■ *Буран ҡотора, күҙ асырлыҡ әмәл юҡ. Яҙғы буран бигерәк тә алама була бит ул.* Р. Солтангәрәев.

♦ **Алама тай ябағы.**

● *Һыуыҡ менән эт аламаға үс.* Мәҡәл.

**АЛАМА** [2] *и. диал. кар.* **баҡта** 1.

**АЛАМА** [3] *и. диал.* Сыуын.

**АЛАМА** [4] *и. диал.* Иген сүбе; ҡый.

**АЛАМАҒОЛОШ** *и. кәмһ.* Насар кейенеп йөрөгән ярлы кеше. *[Заһит:] Ғәйзулла өйҙәме икән? Өйҙә булып та өйөнә индермәһә, ҡайҙа барырға! Уның бәлки һөйләшкеһе лә килмәҫ әле. Аламағолоштоң кемгә кәрәге бар.* Я. Хамматов.

**АЛАМАЛАНЫУ** *к.* **1.** Аламаға әйләнеү; туҙыу. *Кейем иҫкерҙе, аламаланды.*

**2.** Насарайыу, яманға әйләнеү. *Баланың холҡо боҙолдо, аламаланды.*

**АЛАМАН** [1] *и. иҫк.* Һуғышта алынған йәки талап алынған мал-мөлкәт. *Аламан алыу.*

**АЛАМАН** [2] *и. иҫк.* Кешеләр төркөмө, ҡара халыҡ.

**АЛАМАНСЫ** *и. иҫк.* Кеше талаусы. *Аламансы Тәфтиләү яман ҡыҫа икән.* Ғ. Ибраһимов.

**АЛАМ-ҺОЛАМ** *и. йыйн.* Иҫкергән, туҙған кейем-һалым; тотонолған сепрәк-сапраҡ.//*Алам-һолам кейем.* ■ *[Закир:] Беҙҙең яҡтар ҡалаға килһә, ҡарбуз-ҡауын ашар өсөн элек йәшел баҙарға йәки алам-һолам һатып алырға тип, толчок баҙарына бара торған.* З. Биишева.

**АЛАН** *и. диал.* Аҡлан.

**АЛАНҒЫ** *и.* Нәҙек оҙон һабаҡлы, быуын-быуын булып, уратып сыҡҡан оҙонса ваҡ япраҡлы, ваҡ суҡ сәскәле болон үҫемлеге.

**АЛАН-ЙОЛАН** *р.* Бер тегеләй, бер былай; ялт-йолт. *Алан-йолан ҡараныу.* ■ *Мин алан-йолан ян-яғыма ҡарайым, ә артҡа ҡарарға батырсылыҡ итмәйем.* З. Хисмәтуллин.

**АЛАН-ҠОЛАН** *р.* Унда-бында ялп-йолп, ялт та йолт. *Алан-ҡолан итеү. Алан-ҡолан күренеү.* ■ *Ут өҫтөнән алан-ҡолан үтеп китә ярғанат.* С. Ҡулибай.

**АЛАҢЛАТЫУ** *к.* Алан-йолан иттереү (күҙҙе). *[Мәскәй әбей] ҡот осҡос күҙҙәрен алаңлатып, тирә-яғына ни тиклем ҡараһа ла, ҡыҙыҡайҙы күрмәгән* (Әкиәттән).

**АЛАҢЛАУ** *к.* Ян-яҡҡа алан-йолан, ялт-йолт күҙ ташлау. *Ҡарттың ҡыҫығырак күҙҙәре .. ниҙәндер ҡурҡҡандай алаңлап тора.* Н. Мусин. *Тирә-яҡҡа алаңлап ҡарап барам.* С. Агиш.

**АЛАҢҒЫР** *с. диал.* Алаңғырт.

**АЛАҢҒЫРТ** *с.* **1.** Урыны-урыны менән тимгел-тимгел булып үҫкән (ағас, үлән кеүек нәмәгә ҡарата). *Быйыл еләк алаңғырт.* ■ *[Сыуаҡай тауының] алаңғырт сауҡалы түбәһенә баҫып ҡарап торам.* Н. Мусин.

**2.** Аяҙлы-болотло (көнгә ҡарата).

**АЛАҢҒЫРТЛАУ** *к.* Аяҙлы-болотло булыу. *Көн алаңғыртлап тора.*

**АЛАП** [1] *и.* **1.** Иген йәки башҡа нәмә һалыу өсөн талдан үреп йәки ҡабыҡтан тегеп эшләнгән оҙонса ҙур һауыт. *Солан эсендә, бер мөйөштә, бер ҙур ҡабыҡ алап менән көл тора.* М. Ғафури.

**2.** *күсм.* Ҙур, килбәтһеҙ нәмәгә әйтелә. *Ауыҙы алап тиклем.*

● *Ҡыш ҡорһағы — киң алап.* Әйтем.

**АЛАП** [2]: **алап һалыу** оран һалыу. *Әҙрәкә эште аңлаған, алап һалып, Ҡот тауға бар дейеүҙе йыйнаған.* «Урал батыр».

**АЛАПАЙ** *с.* **1.** Килешһеҙ ҙур, йыйнаҡһыҙ. *Алапай мейес.*

**2.** *күсм.* Эш мәнсһен белмәгән, йүнһеҙ; эшлекһеҙ. *Алапай кеше.*

♦ **Алапай менән шалапай** бергә йөрөгән ике эшлекһеҙҙән көләп әйтелә.

● *Аяҙ-аяҙ көндәрҙә — мейес башында алапай, буран-буран көндәрҙә — һунар сыҡҡан алапай.* Әйтем.

**АЛАРТЫУ** *к.* Күҙҙең ағын әйләндереп, ҙур итеп асыу. *Ғәзимә: «Алла, баламды нишләттегеҙ?» — тип, күҙҙәрен алартып баҡырып ебәрҙе.* Һ. Дәүләтшина. *Ҡулаҡ асыу ҡабартты, ҡанлы күҙен алартты.* Х. Ғәбитов.

**АЛАРЫУ** [1] *к.* Алаға әйләнеү, ала төҫкә инеү; алаланыу. *Ҡояш нурын бөрктө, ҡар аларҙы, нурҙар менән уйнап ел иҫте.* Ш. Галин.

**АЛАРЫУ** [2] *к.* Ағы әйләнеп, ҙур булып асылыу (күҙгә ҡарата). *Ҡыҙмаса Ғәйфуллаһың күҙҙәре аларып китте.* Б. Хәсән. *Ҡала тизәр, күргән юҡ ине, күргәс, малай, күҙҙәр аларҙы.* Ғ. Амантай.

**АЛАС** [1] *с. диал. кар.* **аласа** [1].

**АЛАС** [2]: **алас арба** *диал.* йөк арбаһы.

**АЛАСА** [1] *с.* Һирәк-мирәк ала. *Аласа һыйыр. Аласа тауар.* ■ *Күк аласа минең күлдәкәйем, күтәрә лә алмай беләкәйем* (Халыҡ йырынан).

**АЛАСА** [2] *и.* **1.** Төрлө төҫтән буй-буй итеп һуҡҡан киндер. *Йүгереп сыҡтым урам аша, өҫтә күлдәк аласа.* Б. Ишемғол.

**2.** Төрлө төҫтәге йөндән буй-буй итеп һуҡҡан балаҫ; буй балаҫ. *Айбикә аҫтындағы аласаһын мендәр өҫтөнә ҡайырып ҡапланы ла, .. һыйыр һауырға сығып китте.* Һ. Дәүләтшина.

**АЛАСАБЫР** *и. шул уҡ* **аласабыр өйрәк** (*кар.* **өйрәк** 1). *Аласабыр тигән ала өйрәк бала уйната тымыҡ күлдәрҙә* (Халыҡ йырынан).

**АЛАСАҠ** *и.* Бурыҫҡа бирелгән аҡса йәки бүтән нәмә; кереһе бирәсәк.

● *Ала ҡарҙа аласағың булһын.* Әйтем.

**АЛАСАҠ-БИРӘСӘК** *и. йыйн.* Ала торған һәм бирә торған аҡса йәки бүтән нәмә. *Колхоздың аласаҡ-бирәсәген асыҡлау.*

**АЛАС-ЙОЛАС** *с.* Төрлө төҫтә; ала-сола. *Бөтә ер сүлгә оҡшап ҡала, йылға үҙәндәре менән тугайлыҡтар ғына алас-йолас йәшел булып ята.* Ә. Вахитов. *Стеналар ялҡын һуғып, ҡарайып, алас-йолас булып бөткән.* Ж. Кейекбаев.

**АЛА-СОЛА** *с.* Тимгел-тимгел төрлө төҫтә. *Төньяҡтан иҫкән .. һалҡын ел ала-сола булып ятҡан ҡар өҫтөн һеперен үтә.* Ә. Зәйнуллин.

**АЛАСУҠ** *и.* Ҡуҙаҡлылар төркөмөнә ҡараған суҡ сәскәле, яҫмаҡ орлоҡло күп йыллыҡ үҫемлек.

**АЛА-СЫБАР** *с.* Ала менән сыбар ҡатнашҡан. *Ала-сыбар ат.* ■ *Жираф төҫлө ала-сыбар сепрәккә уранып йөрөй ошо ташкурсаҡ ҡыҙ, йәмен боҙоп урамдың.* М. Тажи.

**АЛАСЫҠ** *и.* **1.** Йәйләүҙә көн итеү өсөн ҡабыҡ йәки ситәндән эшләнгән ҡаралты. *Ҡабыҡ аласыҡтарҙың, тирмәләрҙең алдында усаҡтар яна.* Ғ. Ғүмәр.

**2.** (*йәки* **аш аласығы, ут аласығы**) Ишек алдындағы йәйге аш өйө. *Бибеш аласыҡта, киске тамаҡҡа өйрә бешерер өсөн тары төйә.* З. Биишева. **Аҡ аласыҡ** мөрйәле усағы, мейесе булған аласыҡ. **Ҡара аласыҡ** мөрйәһеҙ аласыҡ.

**3.** Төрлө маҡсат өсөн эшләнгән еңел ҡоролма. *Йәмле Ағиҙел буйында аласыҡ тора. Мейес алдында тимерселәр корос ҡыҙҙыра.* М. Сөндөклө.

**АЛАҪЛАУ** *к.* Кейеҙ йәки алама сепрәк яндырып төтәҫләү (им өсөн). *Ауырыу атты алаҫлау.*

**АЛАТУБА** *и.* Ваҡ ҡыр күгәрсене. *Тугайҙа муйыл сәскәһе күпереп ултыра,.. турғай сырылдай, кәкүк саҡыра, пырх итеп күтәрелеп алатубалар оса.* Т. Килмөхәмәтов.

**АЛАТЫР** *и. һөйл.* Ҡаты итеп «ц» менән һөйләшкән мишәрҙәрҙең атамаһы. (Алатыр ҡалаһы яғынан күсеп килгәндәр). *Ер булғанда типтәрҙәр иң яҡшыһын үҙенә ала, алатырҙарға .. насары эләгә.* «Совет Башҡортостаны», 1968, 26 июнь.

**АЛАҺЫ** *и. кар.* **аласаҡ.**

**АЛАША** *и.* **1.** *кар.* **ат** [1].

**2.** Йонсоу, ябыҡ ат. *[Аҡтар:] Әйҙә бесәндәрен ылауға тейә. Алашаһын ек. Арыҡ булһа ла, арбаны тартып бара алыр әле.* Ш. Шәһәр. *Поезд станция һайын оҙаҡ-оҙаҡ туҡтап, йонсоған ҡарт алаша шикелле, ухылдай-ухылдай, көнө-төнө барҙы.* Ғ. Лоҡманов.

**3.** *күсм. мыҫҡ.* Ҡатын-ҡыҙға ымһынып маташҡан оло ир. *[Сәхипгәрәй:] Ҡара һин уны, ҡарт алашаны, өсөнсө бисә тип хыяллана.* И. Ғиззәтуллин.

● *Алаша типһә, ныҡ тибә.* Әйтем.

**АЛАШАПРАН** *и. диал.* Юл өҙөлгән саҡ. *[Шәйәхмәт:] Ә һинең атайың менән ағайыңды, Ғатаулла, алашапран ваҡытта уҡ Ташҡаҙған сокорона илтеп ташланылар.* Й. Солтанов.

**АЛАШАР** *и.* Енси биҙҙәре алынға ир.— *Алашарҙан балаң нисәү тип һорамайҙар. Эйе, алашар баланан, Садрислам намыҫтан мәхрүм кеше.* Ш. Бикҡол.

**АЛБАН** *и.* Албанияның төп халҡын тәшкил иткән милләт һәм шул милләттең бер кешеһе. *Албан халҡы. Албан ҡатыны. Албан теле.*

**АЛБАР** *и. диал.* Аҙбар.

**АЛБАРЫ** *р. диал.* **1.** Башҡа ваҡытта. *Албары һемтәнләп йөрөп ята торғайны, бөгөн сыҡмай ҙа ҡуя..*

**2.** Башҡа, башҡаса. *Һин булмай, албары кем булһын.*

**АЛБАҪТЫ** *и.* Хөрәфәт буйынса, ялбыр һары сәсле, оҙон имсәкле ҡатын-ҡыҙ ҡиәфәтендә һүрәтләнгән ен-бәрей заты. *Беҙ [элек] донъяла .. булмаған әллә ниндәй албаҫтыларға ышана торғайныҡ.* Т. Баишев./*яманл.* Уҫал ҡатын-ҡыҙға әйтелә. *[Шаһнияз:] Кит янымдан, албаҫты! Күҙемә күренмә!* Ә. Мирзаһитов.

◆ **Албаҫты баҫыу** йоҡлағанда баҫлығыу. **Албаҫты ойлау** (*йәки* **эйәләү**) кешегә, йәнәһе, ен эйәләшеп ауырыу.— *Насар шул Ғәйзулланың хәле. Албаҫты ойлаған. Әле шуны ҡыуҙылар.* Я. Хамматов.

**АЛБИРМӘҪ** *с.* Башҡаларҙы алдына сығармай торған; бик етеҙ. *Вәгәҙә иткән төн уртаһы етте. Сөләй байҙың албирмәҫ ҡола йүгереге эйәрле.* С. Кулибай. *Данлы юл үтте Таңатар ауылы үҙенең албирмәҫ тырыш уландары-ҡыҙҙары менән.* «Совет Башҡортостаны», 1966, 1 март.

**АЛБЫРАТЫУ** [1] *ҡ.* **1.** Тәҡәтен алыу, ҡаңғыртыу. *Эш менән кешене албыратыу.*

**2.** *эйһ. ф. ҡар.* **албырау** [1].— *Бесәне ваҡ икән. Ун күбәне һалғанса, тамам албыратты.*

**АЛБЫРАТЫУ** [2] *ҡ диал.* Албырғатыу.

**АЛБЫРАУ** [1] *ҡ.* Иҫ-тәҡәтһеҙ булыу; ҡаңғырыу. *Бына ятҡан ауылға барып етә алмай албырап бөткән.*

**АЛБЫРАУ** [2] *ҡ. диал.* Албырғау.

**АЛБЫРҒАНЫУ** *ҡ.* Ни эшләргә белмәй юғалыу; ҡаушау. *Соланға сығыуым булды, ҡапҡа шығырланы. Мал аҙбары аша артҡа тайҙым. Һыу буйынан да ҡараҫҡылар күҙгә салынды. Албырғанып, Нәфиҡ байҙың тиреҫенә абындым.* Р. Низамов. *Кейәү йортона барғас, албырғанма, ҡыҙыҡай!* (Туй йырынан).

**АЛБЫРҒАТЫУ** *ҡ.* **1.** Кешенең ни менәндер күңелен тартыу; әүрәтеү. *Һүҙгә албырғатыу.* ■ *Эштә саҡта әле күңнел тыныс, албырғата һине күп әйбер.* Ғ. Сәләм.

**2.** Кешенең иғтибарын ниҙәндер ситкә тартыу. *[Шимай — Гөлсибәргә:] Кейәү хәҙер килһә, йыртыш менән албырғатып, оҙағыраҡ тотоғоҙ.* Ҡ. Даян./Алдаштырыу (баланы). *Мин ҡайтҡанса баланы албырғатып тор.*

**АЛБЫРҒАУ** *ҡ.* **1.** Ни менәндер мәшғүл булып, онотолоу; әүрәү. *Көн уҙғарһаң эшкә албырғап, бәхет бар ул, бар ул, валлаһи.* К. Кинйәбулатова.

**2.** Иғтибарҙы икенсе бер нәмәгә йүнәлтеү. *[Һуйыр] үҙ тауышына албырғап, һинең аяҡ аҫтыңда ҡар шығырлағанын да .. ишетмәй.* Ә. Гәрәев.

**3.** *диал.* Албырғаныу.

**А́ЛГЕБРА** [*рус.* ⟨ *нем.* ⟨ *гәр.*] *и.* Дәүмәлдәрҙең һан күрһәткесен иҫәпкә алмай, дөйөм ғәмәл ысулдарын өйрәнә торған математика бүлеге.

**АЛГЕБРАИК** *с.* Алгебра ысулы менән башҡарылған; алгебраға мөнәсәбәтле. *Алгебраик кәсер. Алгебраик тигеҙләмә.*

**АЛҒА** *р.* **1.** Ал яҡҡа табан. *Алға барыу. Алға сабыу. Алға ынтылыу.* ■ *Кешеләр күҙгалалар, түш менән алға шыуалар.* Д. Юлтый.

**2.** *ымл. мәғ.* Эш-көрәшкә өндәгәндә әйтелә. *Алға, иптәштәр, алға, бөйөк идеалға.* Һ. Дәүләтшина.

● *Артҡа ҡарап ғибрәт ал, алға ҡарап шөһрәт ал.* Мәҡәл.

**АЛҒАҘАУ** *ҡ. диал.* Алғыһау.

**АЛҒАҘЫУ** *ҡ. диал.* Албырғау.

**АЛҒАСҠЫ** *и.* Ғәскәрҙең алдан барған сафы йәки төркөмө. *Күп ваҡыт та үтмәгән, майҙанда шау-шыу бөтмәгән, алғасҡылар юл башлап, дүрт батырын эйәртеп, .. Ҡатил батша килгән, ти.* «Урал батыр».

**АЛҒАСТЫ** *и. иҫк. кит.* Алдағы хәл йәки күренеш; перспектива.

**АЛҒАШТЫРЫУ** *ҡ. диал.* Алға этеү, алға сығарыу.

**АЛҒЫ** *с.* **1.** Ал яҡтағы, алда торған; *киреһе* артҡы. *Алғы булмә. Алғы теш. Алғы саф.* ■ *Бесән еткәс, тағы Талха, атланып ҡорос атҡа, бесән сапты тугайлыҡта ярышып алғы сафта.* С. Кулибай. *Алғы машинаға ике кеше ултырған.* Б. Бикбай.

**2.** Алда буласаҡ; киләсәк. *Алғы тормош. Алғы яҙмыш.* ■ *Алғы көнгә тағы бөтмәҫ көстәр йыйып, матур уйҙар мин ҡорам.* Ғ. Амантай.

**АЛҒЫР** [1] *с.* **1.** Йәнлекте шәп алыусан, шәп тотоусан; етеҙ, сапсан. *Алғыр бөркөт. Алғыр бүре. Алғыр эт.* ■ *Эт бик алғыр, төлкөнө һайт тигәнсә ҡыуып тота.* М. Тажи.

**2.** Сос, үткер (кешегә ҡарата).

● *Алғыр кеше алымынан билдәле.* Әйтем.

**АЛҒЫР** [2] *и.* Эстән икенсе рәт булып сыҡҡан артыҡ теш.

**АЛҒЫРЛАНЫУ** *ҡ.* Көс-кеүәткә тулышып ярһыу; айбарланыу. *Арыҫландай алғырланып, йөрәкһеп килә егеттәр.* С. Әлибаев.

**АЛҒЫС** *и.* Электромагнит тулҡындары ҡабул итә, ала торған аппарат. *Радио алғыс.*

**АЛҒЫҺАТЫУ** *ҡ.* **1.** Берәй уй-теләк, ниәт менән ашҡындырыу; йөрәкһетеү. *Ерем — алтын бишек, алғыһатыр инде ҡайтырға* (Халыҡ йырынан).

**2.** *эйһ. ф. ҡар.* **алғыһау.**

**АЛҒЫҺАУ** *ҡ.* Берәй уй-теләк, ниәт менән ашҡыныу; йөрәкһеү. *Яҙғы йылға кеүек үҫә барҙы алғыһаған йөрәк ташҡыны.* Ҡ. Даян. *Алғыһап торған буҙ толпар Алпамышаныҡы булһасы.* «Алпамыша».

**АЛҒЫШ** [1] *и. иҫк.* Дуҫ.

● *Тапҡан — табыш, таныған — алғыш.* Әйтем.

**АЛҒЫШ** [2] *и. иҫк.* Яҡшы теләк. *Ата-әсә алғышы. Алғыш алыу.*

● *Алғыш та төшә, ҡарғыш та төшә.* Әйтем.

**АЛДА** [1] *р.* **1.** Йөҙ, күҙ ҡараған яҡта. *Алда команда тауышы ишетелде.* Д. Юлтый.

**2.** Буласаҡ тормошта, киләсәктә. *Һыуыҡ буран да алда әле.* Д. Дәүләтшина.

**3.** Бүтәндәрҙән элек; беренсе. *Ул башҡаларҙан алда килде.* / *күсм.* Эштә алдынғы, беренсе. *Ярышта алда барыу.*

● *Алда буласаҡ туй өсөн бөгөн бейей башлама.* Мәҡәл. *Алда килһәң, ит бешә; һуңға ҡалһаң, бит бешә.* Мәҡәл.

**АЛДА**² *бәйл.* **1.** Сығанаҡ килештәге исемдәр менән эш-хәлдең үтәлеш ваҡытын, тәртибен белдерә; элек. *Бөтә кешенән алда, бөтә кешенән күп һөйләшә торған Новиков та бөгөн һөйләшмәй.* Д. Юлтый.

**2.** Сифат ҡылымдың *-ғр* формаһы менән килеп, эш-хәлдең үтәлеш ваҡытын белдерә. *Китер алда. Ҡайтыр алда.* ■ *Бәйгегә етер алда һәр бер йүгерек ат таһыллана торғайны.* Д. Юлтый.

● *Бөгөн кәрәгеңде иртәнгә кәрәгеңдән алда әҙерлә.* Мәҡәл.

**АЛДАҒЫ** *с.* **1.** Алғы яҡтағы; алғы. *Талипов .. алдағы бер парта араһына кереп ултырҙы.* М. Тажи.

**2.** Алда буласаҡ; киләһе. *Алдағы баҙар. Алдағы йыл. Алдағы көн. Алдағы эш.* ■ *Ил иркен итеп, күкрәк киреп тын алды, алдағы матур, тыныс тормошҡа аяҡ баҫты.* Һ. Дәүләтшина.

● *Бөгөнгөһө — ҡулыңда, алдағыһы — улыңда.* Мәҡәл.

**АЛДАҠЛАШЫУ** *ҡ. диал.* Алдау.

**АЛДАҠСЫ** *и.* Алдай торған кеше. // *Алдаҡсы кеше.* ■ *Вәхши күҙ, шаҡшы күңел, алдаҡсы тел донъя тулы.* Ш. Бабич.

● *Алдаҡсы дуҫың булғанса, ысын дошманың булһын.* Мәҡәл. *Алдаҡсының теле мең ҡолас.* Әйтем. *Маҡтансыҡ иренен ялар, алдаҡсы артына ҡарар.* Мәҡәл.

**АЛДАЛАУ** *ҡ. диал.* Алдау. *Инсан улын алдалау анһат, еңел, сөнки ул бер ҡатлы һәм йомшаҡ күңел.* Ш. Бабич.

**АЛДАН** *р.* **1.** Башлап, беренсе булып. *Бисәһе алдан, Тимербулат уның артынан барған. Әллә ниндәй бер һарайға килеп еткәндәр* (Әкиәттән).

**2.** Ваҡытынан элек, көн элгәре. *Ниңә кеше үҙенең һәләкәтен алдан белеп, ҡасып ҡотола алмай икән.* З. Биишева.

♦ **Алдан алыу** 1) берәй эш-хәл тураһында башҡаларҙан алда әйтеп кәртәләп тороу; 2) кеше әйтер һүҙҙе унан элек әйтеү. **Алдан йөрөгән** эште башлап алып барған. *Улар үҙҙәрен ауылдың иң олоһо, иң өлкән ярҙамсыһы, халыҡ араһында алдан йөрөгән, бөтә халыҡ кәрәген ҡайғыртҡан кеше урынына ҡуя.* Ғ. Дәүләтшин. **Алдан күреү** ни булырын ваҡытынан элек белеп тороу. *[Байгужа] ҡарап торғанда, йыуаш, һәлмәк кеше кеүек күренһә лә,.. тапҡыр, етеҙ, алдан күрә торған кеше.* Д. Юлтый.

● *Алдан саҡырған кәкүктең башы ауырта.* Мәҡәл. *Бәләкәй тәгәрмәс алдан тәгәрләй.* Мәҡәл.

**АЛДАН-АЛА** *р.* Ваҡыты етмәҫ борон; көн элгәре. *Табибә әбей: «Уҡый беләм тигән булаһың...» — тип алдан-ала тантана итте.* З. Биишева.

**АЛДАНЫУ** *ҡ.* **1.** *төш. ҡар.* **алдау.** *[Хәсби:] Ошо йәшемә етеп, бер кемдән алданғаным юҡ ине.* Б. Бикбай.

**2.** *ҡайт. ҡар.* **алдау.**

● *Ҡош емгә алданыр, кеше һүҙгә алданыр.* Мәҡәл.

**АЛДАП-ЙОЛДАУ** *ҡ.* Төрлөсә алдау; алдаштырыу. *Байғуралар алдап-йолдап, юхалап, ҡурҡытып, ярлы-ябағаның ҡанын һурҙы.* И. Ғиззәтуллин.

**АЛДАП-ҺОЛДАУ** *ҡ. диал.* Алдап-йолдау.

**АЛДАР** *и.* Алдай торған кеше; алдаҡсы.— *Берҙән-бер баламдың зәғиф булып ҡалыуына шул ырымсы алдарҙар сәбәпсе булды бит.* С. Агиш.

**АЛДАТҠЫС** *и.* Йәнлек, ҡош-ҡорт эләктереү өсөн ҡапҡанға ҡуйылған ем. *Бүрегә ҡапҡанды алдатҡыс менән ҡалалар.* / Балыҡ һымаҡ итеп ҡалайҙан эшләп, ҡармаҡ осона ҡуя торған йылтырауыҡ; йылтырма.

**АЛДАТЫУ** *ҡ. һир. ҡар.* **алдау.**

**АЛДАУ** *ҡ.* **1.** Дөрөҫ булмағанды ысын итеп һөйләү; ялғанлау. *Алдап ошаҡлау.* ■ *— Апай, алдай ул, Фатима түгел, ысын исеме уның Батый.* М. Тажи *[Һыуһылыу — Һәүбәнгә:] Шулгән батша ҡыҙымын, һине алдап тормамын.* «Аҡбуҙат». **Алдай белмәй алдайһың** кешенең һүҙенә ышанмағанды белдергәндә әйтелә. / Йәшерен ниәткә ирешеү өсөн кешене ялған һүҙ менән албырғатыу. *[Бай:] Арыу иттем әле был һунарсыны, алдап бер затлы нәмәһен алдым* (Әкиәттән).

**2.** Биргән һүҙҙе, вәғәҙәне боҙоу. *Ваҡытлы хөкүмәттең халыҡты, эшсе-крәҫтиәнде, һалдаттарҙы алдауы көндән-көн асыҡлана бара.* Һ. Дәүләтшина.

**3.** Иғтибарҙы аулап, алдаштырыу, әүрәтеү. *Үҙеңде үҙең алдау. Тамаҡты алдау.* ■ *[Сабира апай] тағы аш-һыу әҙерләне. Өҫтәлгә ҡуйҙы ла, бик тә йоҡо баҫып барғас, саҡ ҡына күҙемде алдап алайым, тип урынға барып ятты.* Ә. Вахитов. / Йәшерен уй менән ҡыҙҙы әүрәтеү. *Алыр булһаң, яусы ебәр, алмаҫ булһаң, алдама* (Халыҡ йырынан).

**АЛДАШТЫРЫУ** *ҡ.* Күңелен аулап, албырғатыу; әүрәтеү, йыуатыу. *Шакир атын туғарып, малайҙарҙы алдаштырып ебәрҙе.* Һ. Дәүләтшина.

**АЛДАШЫУ** *ҡ.* Алдыҡ һүҙ һөйләү; ялғанлау. *Батыр булғас, батыр бул. Алдашып йөрөмә тағы! Алдашыу һәм ҡурҡаҡлыҡ иң алама һанала.* Ғ. Сәләм.

**АЛДЫ-АРТТЫ: алды-артты ҡарау** (*йәки* **уйлау**) берәй эш йәки мәсьәләне һәр яҡлап үлсәү, самалау. *[Байрамбикә] әле йәш, алдын-артын, уңын-һулын ҡарап, уйлап йәшәргә өйрәнмәгән.* Ш. Шаһәр.

**АЛДЫҠ** *и.* Дөрөҫ булмаған хәбәр, ялған һүҙ.

♦ **Алдыҡ тоҡсайы** гел генә алдап йөрөй торған кешегә ҡарата әйтелә.

● *Алдыҡтың аяғы ҡыҫҡа.* Мәҡәл.

**АЛДЫМ** *р. диал.* Яҡшыраҡ.

**АЛДЫМ-БИРҘЕМ** *и. һөйл.* Бер яҡтан бирергә, икенсе яҡтан алырға тигән ике аралағы килешеү. *Алдым-бирҙем ҡағыҙы. Алдым-бирҙем яһау.*

**АЛДЫН** *с.* **1.** Эш-тормошта бүтәндәрҙән алда; өҫтөн. *Алдын кеше.*//*Алдын барыу. Алдын йөрөү.* ■ *Алдын булмаһаң эшеңдә, барып сыҡмаҫ иҫәбең* (Халыҡ йырынан).

**2.** Уй-фекере менән бүтәндәрҙән алда; өҫтөн. *Алдын фекерле.* ■ *Хөкүмәт мөәссәһендә эшләп*

*йөрөгән күп кенә алдын башҡорт егеттәре бар.* Ш. Хоҙайбирҙин.

**АЛДЫНА** *бәйл. функцияһында* **1.** Эш-хәлдең предметтың йәки кешенең йөҙ яғыиа йүнәлгән булыуыи белдергәндә ҡулланыла. *Ҡамыр батыр алдына кот оскос дейеү килеп тә баҫҡан* (Әкиәттән).

**2.** Талап, баһа хоҡуғына эйә булған кешенең, йәмғиәтселектең ҡарамағы. *[Эткол — Йәноҙакҡа:] Ошо аҡ һаҡалдарыбыҙҙы һәлберәтеп, беҙҙе хөкөм алдына ҡуймаҡсы булаһың икән.* Ғ. Дәүләтшин.

**АЛДЫНАН** *бәйл. функцияһында* **1.** Эш-хәрәкәттең низең дә булһа алғы яғынан башланыуын белдергәндә ҡуллаиыла. *Өй алдынан китеү.*

**2.** Эш-хәлдең, ваҡиғаның икенсе бер эш-хәлдән элек булғанын белдергәндә ҡулланыла. *Йыйылыш алдынан килеү. Урак алдынан һөйләшеү үткәреү.* ■ *Һандуғастар таң алдынан ғына һайрай башлай.* М. Тажи.

**АЛДЫНҒЫ** *с.* **1.** Алда торған; алдағы. *Иң алдынғы урында бесән саба торған косилкалар, бесән йыйғыстар, кул тырмалары тора.* Ғ. Дәүләтшин.

**2.** Хеҙмәт һөҙөмтәһе менән башҡаларҙан өҫтөн; алдағы. *Алдынғы бригада. Алдынғы урын.* ■ *Уны [Фатиманы] алдынғы уҡыусыларҙан һанап, сигелгән күлдәк менән бүләкләнеләр.* Б. Бикбай./*и. мәғ. гәҙәттә күпл.* Хеҙмәттә, уҡыуҙа башҡаларҙан алда барыусы. *Ауыл хужалығы алдынғылары. Алдынғылар кәңәшмәһе.*

**3.** Үҫеш кимәле юғарыраҡ. *Алдынғы йәмғиәт. Алдынғы совет фәне. Алдынғы техника.*/Уйфекере бүтәндәрҙән өҫтөн. *Алдынғы идеялар.* ■ *Төплө аҡылы, әҙәплелеге, эшмәкәрлеге уны [Диләне] шулай алдынғы кешеләр араһына ҡуйған.* Һ. Дәүләтшина.

**АЛДЫНДА** *бәйл. функцияһында* **1.** Эш-хәлдең кемдер бар ваҡытта, уның ҡаршыһында башҡарылыуын белдергәндә ҡулланыла. *Кеше алдында һөйләшеү.* ■ *Яман әҙәм шул булыр: алдыңда һине ағартыр, артыңда һине ҡаралтыр* (Ҡобайырҙан). *Шәүрә һылыу, һинең алдарыңда шәм милтәһе булып та янайым* (Халыҡ йырынан).

**2.** Кемгә йәки нәмәгә булһа ла бәйләнешле эш-хәлде белдереү өсөн ҡулланыла. *Эшселәр алдында торған бурыстар. Ауырлыҡтар алдында юғалып ҡалмау.* ■ *Кейәү алдында батша бик ҡаты шарттар ҡуя икән* (Әкиәттән).

**3.** Ниндәй ҙә булһа мөнәсәбәте булған кешенең йәки төркөмдөң ҡарашын белдереү өсөн ҡулланыла. *[Офицер — һалдаттарға:] Хәҙер бөтә гарнизон алдында ышанысығыҙҙы юғалттығыҙ.* Д. Юлтый.

**4.** Берәй эш-хәл башланғансы булған ваҡыт аралығын белдереү өсөн ҡулланыла. *Мөһим ваҡиға алдында тороу.*

**АЛДЫР** *и.*, **алдыр аяҡ** Туҫтаҡтан ҙурыраҡ йәйенке һауыт. *Оһолло еңгәнең һыйлы итеп эсеткән, баплап һыуыткан яҡшы ҡымыҙын берике алдыр эсеү менән үк башыңа сыҡ[а].* Ғ. Дәүләтшин. *Тултырғанса һалып киң алдырҙы, аяҡсы ҡарт ҡымыҙ тоттора.* Б. Вәлит.

**АЛДЫРА** *р. диал.* Тәүҙә. *Ҡыҙ биргәндә бауырһаҡ бешерәһең, алдыра үҙең ашайһың.*

**АЛДЫРТЫУ** *к. йөкм. кар.* **алдырыу.** *Хәсән ауылының Янгол бай балаларын уҡытыу өсөн ҡаланан мөғәллимә алдыртҡан була.* М. Минһажетдинов.

**АЛДЫРЫМ** *и. кар.* **ал** [2].

**АЛДЫРЫУ** *к.* **1.** *йөкм. кар.* **алыу** 1—14, 16—19, 21—26.

**2.** Эш-тормошта ниндәйҙер маҡсатҡа ирешеү, теләкте ғәмәлгә ашырыу. *[Аҙнай:] Аҙаҡ мин тоҡ кейеп йүгерештем. Эш сыкманы, һис алдырып булмай.* Ҡ. Даян.

**3.** Үҙ исемеңә яҙҙырып алыу. *Газета алдырыу.*

**4.** Ялан эшендә күпмелер ерҙе иңләп барыу. *Киң алдырыу. Тар алдырыу.* ■ *«Билеңә көс төшөр, улым! Бик яҫы алдырма!» — ти торғайны атаһы [Әхтәрйәнгә].* Р. Низамов.

● *Егет кеше яуҙа көсө менән алдырһа, яланда эше менән алдыра.* Әйтем.

**АЛДЫ-ЯЛДЫ:** **алды-ялды белмәү** һис туҡтамау, өҙмәү. *Салауатсылар ике көн буйы алды-ялды белмәй күпер һала.* Ә. Вахитов.

**АЛЕБА́СТР** [*рус.* ⟨ *гр.*] *и.* Төҙөлөш эштәрендә файҙалана торған гипс ташы, онталған гипс.

**АЛЖИР** *и.* Алжирҙың төп халҡы һәм шул халыҡтың бер кешеһе. *Алжир халкы. Алжир ҡатыны.*

**АЛИМЕНТ** [*рус.* алименты ⟨ *лат.*] *и.* Айырым торған, хеҙмәткә яраҡһыҙ баланы йәки ҡарт атаәсәне тәьмин итеү өсөн туғанлыҡ мөнәсәбәтендә булған кешенең эш хаҡынан закон буйынса тотолған аҡса. *Алимент аҡсаһы. Алимент алыу. Алимент түләү.* ■ *Алиментта түгел ғүмер күрке, ә баланды кеше итеүҙә.* Т. Арслан.

**АЛИРЛӘН** *и. диал.* Ирлән.

**АЛИҺӘ** [*ғәр.*] *и. иҫк.* Ҡатын затынан булған алла; илаһә. *Эҙләгән гишки алиһәмде күңелдә гизләнем.* Х. Ғәбитов.

**АЛЙОРОШ** *с.* **1.** Хата йүнәлешле; яҙа. *Алйорош хәрәкәт. Алйорош булыу.*//*Ҡараңғыла алйорош йөрөп бөтөлдө.*

**2.** *күсм.* Дөрөҫтән тайпылышлы; хата. *Алйорош һүҙ.*//*Алйорош һөйләү.*

**3.** *күсм.* Аҡыл теүәллегенән мәхрүм; алйыған. *[Ваҡиға ханым:] Судъя улым, быны һеҙ алйорош бабай икән тип уйлай күрмәгеҙ. Уның аҡылы теүәл.* С. Кулибай.

**АЛЙОТ** *с.* **1.** Аҡылы камил түгел; ахмаҡ, иҫәр. *Был ниндәй алйот бәндәләр! Башында аҙыраҡ аҡылы булған кеше көлгә картуф алмаштырамы!* (Әкиәттән). *[Ҡәмәр эбей — Ғәләүгә:] Күҙемә күренмә, алйот!* Т. Йәнәби.

**2.** Уйлап, аҡыл менән эшләй белмәгән. *[Сәлимә:] Мин алйот ни, шул көндәштең һүҙен тыңлаған булдым шул.* Һ. Дәүләтшина.

♦ **Алйотмо ни** кемдендер берәй эште хупламағанын белдергәндә әйтелә. *[Өйрәнсек:] Юк өсөн баш ватып, ғүмер кыҫкартырға мин алйотмо ни?!* З. Биишева. **Башты алйотҡа һалыу** аңламаған, белмәгән булып ҡыланыу. *[Юнир — Мирхәткә:] Инде, туғанкай, етте, башыңды алйотҡа һалып маташма. Яҡшы сакта әйт тә бир: һин төштөңмө баксаға?* Ш. Бикҡол.

**АЛЙОТЛАНЫУ** *к.* **1.** Аҡылдан яҙыу, алйотҡа әйләнеү.

**2.** Берәй эште уйламай эшләү, алйоттарса ҡыланыу; иҫәрләнеү. *Алйотланып, һыйырын һатып, һөтһөҙ ултыра.*

**АЛЙЫ-БОЛЙО** *р. диал.* Иләҫ-миләҫ. *Ҡыҙ, оҙаҡ ауырып яңы ғына яҙыла башлаған кеше кеүек, алйы-болйо килеп торҙо.* А. Таһиров.

**АЛЙЫРҘАН** *и. ҡар.* **ирлән.**

**АЛЙЫТЫУ** *к.* Мәшәҡәтле, ауыр хәлгә ҡалдырып интектереү; ыҙалау. *Ул бер яҡтан һуғышы булһынмы, ул туҡтар-туҡтамаҫтан йәшелдәре, аҡтары булһынмы — барыһы ла бер юлы килеп, теңкәне коротоп, алйытып, ыҙалатып бөттөләр.* Ғ. Дәүләтшин.

**АЛЙЫУ** *к.* **1.** Бик ҡартайып аҡыл теүәллеген юғалтыу. *Минең, кеше ҡартайһа — алйый, тигәндәрен ишеткәнем бар барын, ләкин был тиклем булалыр тип уйлағаным юҡ ине.* С. Агиш.

**2.** Хәтер тарҡалыу; аптырау, ҡаңғырыу. *Бер заманды донъяһын типкән халыҡ. Инде алйып тик йөрөйҙәр, һыҙғырып, ай-һалып.* Ш. Бабич.

**3.** Мәшәҡәтле йәки ауыр бер хәлдән интегеү; ыҙаланыу. *Мәскәүҙең Курский вокзалы. Мин билет ала алмай аптырап, алйып бөттөм.* И. Насыри.

**АЛКАЛО́ИД** [*рус.* ⟨ *гәр.* + *гр.*] *и.* Составында азот тотҡан һәм физиологик тәьҫирлеге менән айырылып торған башлыса үҫемлек сығышлы, һелтеле органик матдә.

**АЛКОГОЛИ́ЗМ** [*рус.*] *и.* Араҡыһыҙ түҙмәй торған, иҫһеҙ эсеүҙән ғибәрәт булған ауырыу. *Араҡыны күп эсеү алкоголизм менән тамамлана.* В. Ғүмәров.

**АЛКОГО́ЛИК** [*рус.*] *и.* Эскелеккә һабышҡан кеше; эскесе.

**АЛКОГОЛЛЕ** *с.* Спиртлы, иҫерткес. *Алкоголле эсемлектәр.*

**АЛКОГО́ЛЬ** [*рус.* ⟨*нем.* ⟨ *гәр.*] *и.* **1.** Араҡы спирты./*һөйл.* Араҡы һәм башҡа иҫерткес эсемлектәр. *[Капитан:] Алкоголь менән шөғөлләнәһегеҙме?* Д. Юлтый.

**2. алкоголдәр** *хим.* Молекулаһы составына кислород һәм водород ингән органик ҡатнашмалар.

**АЛҠА** [*гәр.*] *и.* Ҡолаҡҡа таға торған биҙәүес. *Алҡа һабағы. Алҡа тығыны. Көмөш алҡа.* ■ *Алтын алҡа ҡолаҡта, ҡуш беләҙек беләктә* (Халыҡ йырынан).

◆ **Алҡа(лы) гөл** *шул уҡ* **тамсы гөлө** (*ҡар.* **гөл).**

**АЛҠАЛАНЫУ** *к.* Алҡа кеүек булып һалыныу. *Ямғырҙар [сағандың] муйынын биҙәкләп, тамсынан һырға тағыр. Алҡаланып туңған боҙҙар алмастай өҙөлөп тамыр.* С. Ҡудаш.

**АЛҠАЛЫҠ** *и. диал. ҡар.* **йәрпесәк** [1].

**АЛ-ҠАПЫЛДАН** *р.* Көтмәгәндә; ҡапыл-ҡара. *Ал-ҡапылдан әйтеү.*

**АЛҠЫМ** *и.* **1.** Үңәстең өҫкө өлөшө. *Фатима ҡапыл [Мәғүзәнең] алҡымынан һығып алып ергә йыҡты.* Б. Бикбай./Тамаҡ төбө. *Ҡар яуҙы ла яуҙы, тамсы тамды, төйөр торҙо минең алҡымда.* Ғ. Дәүләтов. **Алҡымға тығылыу** 1) төйөр һымаҡ булып, ауырттырып тамаҡҡа ултырыу; 2) сиктән тыш көслө дәрәжәгә етеү (төрлө тойғоға ҡарата). *Асыуы алҡымына тығылды.* **Алҡымдан алыу** 1) кешенең үңәсенә йәбешеү; 2) *күсм.* ныҡ ирекһеҙләү; көсләү. *Бөгөн уҡ түлә, тип алҡымдан ала.*

**2.** Аяҡ һәм аяҡ кейеменең йөҙөнән юғарғы бөгөлгән өлөшө. *Итектең алҡымы тар.*

◆ **Алҡымдан килгәнсә** бик ныҡ туйғанса. **Алҡымын сәйнәү** ажарланып, юҡ итеү, бөтөрөү ниәте менән йәбешеү. *[Мәрйәм — Һарунға:] Совет власы өсөн буржуйҙарҙың алҡымдарын сәйнәргә барам, тине бабайың.* Ә. Мирзаһитов. **Йән алҡымға килеү** *ҡар. йән.*

**АЛҠЫН** *с.* Тулы һыулы, алға етеҙ ынтылышлы. *Ағиҙелкәй алҡын, һыуы һалҡын, тулҡындары тулы, яры киң.* Р. Ниғмәти.//*Их, рәхәт! Шыуа санам, һәм юрта ат алҡын ғына.* Ш. Бабич.

**АЛҠЫНҒАНСА** *р.* Бик ныҡ туйғанса, алдан ҡалғанса (ашау-эсеү). *Кухняла йәмшек танаулы һалдатты алҡынғанса һыйлағандар.* Д. Юлтый.

**АЛҠЫНДЫРЫУ** *к.* **1.** Өҫтөнә сыҡҡанса тултырыу, ныҡ тулғанса һалыу. *Балды алҡындыра ҡойған семәйле көрәгәләр ултыртылды.* Т. Хәйбуллин./*күсм.* Ташып түгелер хәлгә еткереү. *[Һомай] бөтә илде йыйнаған, алҡындырып һыйлаған.* «Урал батыр».

**2.** Ярһытыу, елкендереү. *Йөрәкте алҡындырыу.*

**АЛҠЫНЫУ** *к.* **1.** Бер ыңғай менән етеҙ итеп алға ынтылау. *Тик әсә генә өмөтөн өҙмәй, һаман Еҙемдең алҡынып ятҡан еренә ҡарай.* Ә. Вахитов. /*күсм.* Сиктән ашыу. *[Айбулаттың] алҡынып ятҡан [байлығы] булмаһа ла, көн күрерҙәй йәйы бар.* Һ. Дәүләтшина.

**2.** Ярһыу, елкенеү; ашҡыныу. *Йөрәк алҡына. [Тандыса:] Эҙләй-эҙләй талды аяҡтарым, тауташ, үңер, һырттар артылып; күҙҙәремде өҙмәй ҡараһам да, ҡайҙа китте былар алҡынып.* «Ҡуңыр буға».

**3.** Ашҡынып, ҡомһоҙланып, мул-мул йотоу. *Алҡынып эсеү.*

**АЛҠЫТЫУ** *к. ҡар.* **алҡындырыу** 2. *Әйтерһең, йыр — ташҡын йылға, алҡыта күңелдәрҙе.* Б. Бикбай.

**АЛҠЫШ** *и.* **1.** Кемдеңдер эш-ҡылығына ҡарата белдерелгән ризалыҡ, рәхмәт./Кемделер ҡаршы алғанда ҡул сабып күрһәтелгән оло хөрмәт; хуплау, күтәрмәләү һүҙе. *Алҡыш менән ҡаршы алыу.*

**2.** Кемде йәки ниҙелер хуплау, күтәрмәләүҙе аңлатҡан көслө ҡул сабыш. *Ария тамамлана. Зал көслө алҡыштарға күмелә.*

● *Ата-әсәнең алҡышы утҡа-һыуға батырмаҫ.* Мәҡәл.

**АЛҠЫШЛАНЫУ** *к.* Шатлыҡ, ҡыуаныс менән рәхмәт уҡыу. *[Мәғфүрә:] Сәлимә еңгәм, бахыр, үлә үлгәнсә: «Рәхмәт, килен, һинән күргән изгелекте алла ҡайтарһын»,— тип алҡышланып ятты.* Һ. Дәүләтшина.

**АЛҠЫШЛАУ** *к.* **1.** Кемдеңдер эш-ҡылығына ризалыҡ, рәхмәт белдереү; хуплау. ... *Бөгөн, әсәй, артылаһың, алтмыштан. Уралға ҡоштар төшәләр тыуған көнөң алҡышлап.* Р. Бикбаев.

**2.** Тәбрик итеп, хуплап ҡул сабыу. *Хафиз ҡарт һүҙен бөтөрөп төшө башланы, халыҡ уны алҡышлап, ҡул сапты.* М. Тажи.

**АЛЛА** [*гәр.*] *и.* **1.** Дини ҡараш буйынса, бөтә донъяны яратҡан, уның менән идара иткән юғары зат; хоҙай, тәңре. *Аллаға табыныу. Аллаға ышаныу. Аллаға ялбарыу.* ■ *Ҡуҡтә алла, ерҙә иблис, мин — малай. Береһе «дин» тип, береһе «мин» тип тартҡалай. Белмәйем, әллә алла, әллә иблис алдалай!* Ш. Бабич. **Аллаһы тәғәлә** алланы ололау һүҙе. **Аллаһы әкбәр** 1) доға ҡылғандан һуң әйтелә торған һүҙ; 2) «бөттө», «тамам», «юҡ» мәғәнәһендә ҡулланыла. *Ауылдың ярлыларында юҡ нәмәне булдырыу тигән нәмә юҡ, бары менән* «аллаһы әкбәр». Ғ. Хәйри. **Инша алла** *кар.* **иншалла.**

**2.** *ымл. мәг.* Ҡапыл ҡурҡыуҙы, һиҫкәнеүҙе, ауыртыныуҙы, кешенең хафаһына мыҫҡыл итеүҙе һ. б. тойғоларҙы белдергәндә әйтелә. *Абау алла! Ай алла! Алла, харап итте баламды.* ■ *[Котлояр:] Алла, харап булған икәнһең!* Һ. Дәүләтшина./Ауыртынғанда, һыҙланғанда әйтелә. *«Алла-алла, ойоп та киткән, кәһәрең!» — тип [Мәгүзә] билен тотто.* Т. Килмөхәмәтов.

◆ **Алла белһен** мәғлүм түгеллекте белдерә. **Алла бирһә** (*йәки* **бойорһа, теләһә**) берәй эшкә ниәтләнгәндә йәки өмөт белдергәндә әйтелә. *[Ҡатын:] Алла теләһә, иҫән булырбыҙ.* Д. Юлтый. **Алла бәндәһе** бик йыуаш кешегә ҡарата әйтелә. **Аллаға тапшырыу** бер эште башлағанда, аҙағы уңышлы булһын, тәүәккәлләйек, тигән мәғәнәлә әйтелә. *[Мулла:] Мин олораҡ кеше, аллаға тапшырып, алдағы арбаға ултырырмын инде.* М. Тажи. **Аллаға** (*йәки* **алланың биргәненә**) **шөкөр** тормоштан риза булғанды белдереү өсөн әйтелә.— *Беҙгә, аллаға шөкөр, ошо байлығыбыҙ ҙа еткән, артығы кәрәкмәй.* Б. Бикбай. **Алланан йәйәү ҡасҡан** тәүфиҡһыҙ, тәртипһеҙ кешегә әйтелә. **Алланың [ҡаты] кәһәре һуҡҡыр** [*йәки* **төшкөр**] ҡарғағанда әй телә. **Алланың ҡашҡа тәкәһе** [*йәки* **тәкәһеме әллә**] кемделер айырып ҡарауҙы йәки кемдеңдер үҙ-үҙен өҫтөн ҡуйыуын оҡшатмағанда әйтелә.— *Мулла малайы тигәс тә, ул кем — алланың ҡашҡа тәкәһе түгелдер бит.* В. Исхаҡов. **Алланың рәхмәте киң** дини кешеләр яҡшы эшкә ҡыуанғанда йәки өмөт тотҡанда әйтелә. *[Рәхимә:] Ярар, борсолмайыҡ. Алланың рәхмәте киң.* Һ. Дәүләтшина. **Алланың рәхмәте менән** берәй яҡшы эшкә тәүәккәлләгәндә әйтелә. **Алланың рәхмәте төшһөн** [*йәки* **рәхмәтендә булһын**] яҡшылыҡ теләп әйтелә.— *Алланың рәхмәтендә булғыры, һәйбәт әҙәм ине. Эшмәкәр ине. Әҙәмгә зыяны булманы.* Һ. Дәүләтшина. **Алла рәхмәтенә китеү** үлеү. **Алла һаҡлаһын** хәүеф-хәтәр белдергәндә әйтелә.— *Бынауы кеүек каҡ юлда арбанан ҡолап башыңды ярырһың, алла һаҡлаһын!* Ғ. Дәүләтшин. **Алла хаҡы өсөн** *йәки* **алла хаҡына** ялынып, ялбарып һорағанда әйтелә. **Аллаһы әкбәргә [эшләү]** бушҡа [эшләү]. *[Кәрим:] Приказчик әйтә, берәүгә лә түләнмәй, ти. Ә Сафый ағай әйтә, беҙ бында аллаһы әкбәргә эшләргә килмәгән, ... ти.* Х. Ибраһимов. **Аллаһы әкбәр итеү** берәй кешенең нәмәһен бушҡа алыу. **Алла юлында йөрөгән кеше** динсе. **Алла яҙғаны шулдыр инде** сараһыҙлыҡты белдергәндә әйтелә. **Алла ярҙам** (*йәки* **көүәт**) **бирһен** 1) бер эшкә уңыш теләп әйтелә; 2) ҡыйын хәлдә, ауыр эштә булған кешене ҡыҙғанып әйтелә. **Ни аллаға, ни муллаға** эшке ашмаған, насар, йүне юҡ кешегә ҡарата әйтелә. *[Ямал:] Уйлағаным да юҡ, уйлаясаҡ та түгелмен. Ирме ни ул — ни аллаға, ни муллаға.* М. Тажи. **Собхан алла** берәй нәмәне хуплағанда йәки һоҡланғанда әйтелә. **Уф алла** бик арығанда, ҡурҡҡанда, ҡайғы-ғазап кисергәндә әйтелә. *[Тәнзилә әбей:] Уф алла-ҡайым, йәнем тамағыма килеп тығылды бит.* М. Тажи. **Эй** [*йәки* **уй**] **алла** әсенгәндә, ҡайғырғанда, хафаланғанда йәки башҡа бер көслө хис белдергәндә әйтелә. *Эй алла, бөтмәҫ бәлә булды ла баһа.* Һ. Дәүләтшина. **Эй алланың хикмәте** бер нәмәгә аптырағанда әйтелә. **Я алла** хафаланғанда, ҡайғырғанда әйтелә. *Я алла, ниҙәр генә күрәһеләрем бар икән.*

● *Аллаға ышанған ас ҡалған, муллаға ышанған буш ҡалған.* Мәҡәл.

**АЛЛАЛАШТЫРЫУ** *к.* Алла кимәленә күтәреү, аллаға табынғандай табыныу. *Һинд халҡы ла, үҙе аяҡ баҫа алмағас, Һималайҙы аллалаштырып ҡараған.* К. Әхмәтйәнов.

**АЛЛАНДЫРЫУ** *к.* Ал төҫкә индереү. *Ниңә миңә йөҙгә кершән һөртөп алландырырға?* Й. Солтанов.

**АЛЛАНЫУ** *к.* Ал төҫкә инеү. *Сәскәләргә таң ысыған бөркөп Сулпан ҡалҡа, офоҡ аллана.* Р. Ғарипов. *Алма бешһә — аллана, ҡауын бешһә — баллана* (Халыҡ йырынан).

**АЛЛАУ** *к.* Ал төҫкә буяу. *Ике битең алһыу-алһыу, алһыу битте аллама* (Халыҡ йырынан).

**АЛЛАҺҮЛӘ** *и.* Доға исеме. *Ирәндекәй тауҙың ай башына аллаһүлә яҙҙым ташына* (Халыҡ йырынан).

**АЛЛАҺЫҘ** *с.* Аллаға ышанмаған; динһеҙ, дәһри.

**АЛЛАҺЫУ** *өнд.* **1.** Мөриттәр зекер менән шашып, «алла» исемен бик йөрәктән сығарғанда әйтелә.

**2.** Бала бәүеткәндә әйтелә.

**АЛЛЕГОРИК** *с.* Аллегорияға мөнәсәбәтле. *Аллегорик алым. Аллегорик образ.*

**АЛЛЕҒО́РИЯ** [*рус.* ⟨ *гр.*] *и.* Ниндәйҙер фекер йәки төшөнсәне ситләтелгән образ аша биреү ысулы.

**АЛЛЕ́ГРО** [*рус.* ⟨ *ит.*] *муз.* **1.** *р.* Бик етеҙ, тиҙ (музыкаль әҫәрҙең башҡарылыш темпына ҡарата).

**2.** *и.* Бик етеҙ башҡарыла торған музыкаль әҫәр йәки уның өлөшө.

**АЛЛЕРГИ́Я** [*рус.* ⟨ *гр.*] *и. мед.* Организмдың ауырыу тыуҙырған матдә тәьҫиренә ныҡ һиҙгерлеге.

**АЛЛЕ́Я** [*рус.* ⟨ *фр.*] *и.* Ике яғына ағас ултыртылған юл йәки баҡсалағы, парктағы юл. *Тирәк аллеяһы.*

**АЛЛИТЕРА́ЦИЯ** [*рус.* ⟨ *лат.*] *и. әҙ.* Шиғыр йәки телмәрҙең яңғырашын көсәйтеп, үҙенә бер төрлө көй биреп, тәьҫирен арттырыу өсөн бер үк тартынҡы өнө булған һүҙҙәрҙе бер тирәгә туплау алымы (мәҫ. «Күгәреп тә килгән күгәл өйрәк күгелйем дә күлдә йөҙмәгән», тигәндәге «к» өнө).

**АЛЛЫ-АРТЛЫ** *р.* Береһе артынан береһе. *[Тимербулат менән ҡыҙҙар] аллы-артлы теҙелешеп тирмәгә ҡайттылар.* Һ. Дәүләтшина.

**АЛЛЫ-ҒӨЛЛӨ** *с.* Төрлө төҫтәге. *Аллы-гөллө сәскә бирһәм, каҙарһыңмы түшеңә* (Халыҡ йырынан).

**АЛЛЫК** *и. диал.* Күмелдерек.

**АЛЛЮР** [*рус.* ⟨ *фр.*] *и.* Аттың төрлө йөрөш алымы (атлау, юртыу, юрғалау, сабыу). *Һыбайлылар беренсе аллюр менән яңы позиция биләргә ашығалар.* Ә. Ихсан.

**АЛМА**[1] *и.* **1.** Алһыу йәки аҡ сәскәле, итләс мурт емешле ағас. *Ҡырағай алма. Урман алмаһы. Алма ағасы. Алма баҡсаһы. Алма сәскәһе.* ■ *[Баҡсала] ер еләге, сейә, алма һәм .. төрлө-төрлө сәскәләр .. тулып ултыра.* Ғ. Дәүләтшин.

**2.** Шул ағастың емеше. *Эре алма. Вак алма. Әсе алма. Ҡаты алма.* **Алма кеүек** матур, таҙа (бала-сағаға, йәштәргә ҡарата). *Сәңгелдәктә ята көләмһөрәп алма кеүек матур йәш бала.* Ғ. Әмири.

**3.** (*баш хәреф менән*) Ҡатын-ҡыҙ исеме.

♦ **Алма биҙәк** түңәрәк-түңәрәк биҙәк. *[Зөһрәнең] алма биҙәк төшкән .. зәңгәр күлдәге .. талғын елгә әкрен генә елберләп тора.* «Башҡортостан ҡыҙы», 1969, № 9. **Алма сыбар** *ҡар.* **сыбар. Бит алмаһы** *ҡар.* **бит. Күҙ алмаһы** *ҡар.* **күҙ** 1.

● *Алма ағасынан алыҫ төшмәҫ.* Мәҡәл. *Алманың аҫылын ҡорт ашар.* Мәҡәл.

**АЛМА**[2] *и.* Ауыр нәмәне һалмауырлап күтәрә торған оҙон нәҙек бүрәнә. *Нигеҙ бүрәнәләрен алма менән күтәрҙек.*

**АЛМАҒАС** *и.* Алманың ағасы. *Алмағастың ике алмаһындай, оҡшаныҡлар беҙҙең ғүмерҙәр.* М. Хәй.

**АЛМАҠ-ҺАЛМАҠ** *р. диал.* Алмаш-тилмәш.

**АЛМАЛАНЫУ** *ҡ.* Алмаға тумалыу; алмалы булыу. *Алмағастар инде алмалана, баҡылдаша һыуҙа өйрәктәр.* Х. Ғиләжев.

**АЛМАЛАУ** *ҡ.* Алмаға оҡшатып биҙәк яһау.

**АЛМАЛЫ** *с.* Алып, ҡабат ҡуймалы; алынмалы. *Алмалы ҡапҡас.*

**АЛМАН** [*гәр.*] *и иҫк.* Немец.

**АЛМАС** *и.* **1.** Саф углеродтың үҙгәреүенән барлыҡҡа килеп, башҡа минерал һәм аҫыл таштарҙан ҡатылығы, йылтырлығы менән күпкә өҫтөн торған үтә күренмәле аҫыл таш. *Алмас яҡтылығы. Алмас ҡашлы йөҙөк. Алмас ташы.*

**2.** (*йәки* **алмас тимер**) Иң юғары сифатлы үткер ҡорос.//*Алмас ҡылыс. Алмас хәнйәр. Алмас башлы уҡ.* ■ *Күк тимер ҡайрау менән алмас булмаҫ.* Аҡмулла. *Алмас тимер менән яҙалар икән көмөш йөҙөктәрҙең ҡаштарын* (Халыҡ йырынан).

**3.** Быяла ҡырҡҡыс.

● *Алмасты алмас менән ҡырҡалар.* Мәҡәл.

**АЛМАУ** *и. иҫк.* Ҡанун, закон.

**АЛМАУТ** *и.* Алма кеүегерәк емеш биргән, үрмәле урман үләне.

**АЛМАШ**[1] *и.* **1.** Тейешле ваҡытта кемдеңдер урынына баҫып, эшен дауам иткән кеше йәки кешеләр төркөмө. *Ул [Аҡбулат] үҙ алмашы эш башламаҫ борон уҡ барып, эште барлай.* Ғ. Дәүләтшин.

**2.** *күсм.* Оло быуындың эшен дауам итерлек йәш быуын. *Алмаш әҙерләү.* ■ *Комсомолдар үҫеп тора партияға алмашҡа* (Халыҡ йырынан).

**3.** *с. мәғ.* Кәрәк саҡта кемдең йәки нимәнеңдер урынына ҡуйыу, файҙаланыу өсөн тотолған. *Алмаш кейем. Алмаш тәгәрмәс.* ■ *Кисә, бесәнгә төшөү сәбәпле, йәйләүҙән дүрт кешене — иҫәпсене, ике көтөүсене, алмаш һауынсыларҙың береһен бесәнгә ҡуштылар.* Ә. Вахитов.

♦ **Алмаш булыу** аҡыл дөрөҫлөгөн юғалтыу; алмашыныу. **Ҡул алмашы** *ҡар.* **ҡул**[1]. *Кинйәбикә ике ҡатынға ҡул алмашына әйтте.* Ж. Кейекбаев.

**АЛМАШ**[2] *и. грам.* Телмәр эсендә исем, сифат йәки һан урынына ҡулланыла торған һүҙ. *Зат алмаштары. Күрһәтеү алмаштары. Һорау алмаштары.*

**АЛМАША** *с.* Аҡыл дөрөҫлөгөнән мәхрүм, аҡылы кәм; алйот, иҫәр. *Ҡарттың өлкән ҡыҙы: «Кәрәк ине! Йәш ғүмеремде әрәм итеп йыланға барырға әллә мин алмашамы?» — тип йүгереп инә лә китә* (Әкиәттән).

**АЛМАШАЛАНЫУ** *ҡ.* Алмаша булыу, аҡыл алмашыныу.

**АЛМАШЛАТЫУ** *ҡ.* Әле береһен, әле икенсеһен алмаштырыу; сиратлатыу. *Ҡулды алмашлатып болғау.*

**АЛМАШЛАУ** *ҡ.* **1.** Береһен береһе алмаштырыу, алмаш-тилмәш итеү; сиратлау. *[Айбулат менән Истебай] алмашлап ял иттеләр.* Һ. Дәүләтшина.

**2.** Әле береһен, әле икенсеһен алмаштырыу; сиратлау. *Ике битенән алмашлап үбеү.* ■ *[Зыяның] салбар балаҡтарынан соборлап һыу ағып тора, аяҡтарын алмашлап баҫҡан һайын сабаталары лас-лос килә ине.* М. Тажи.

**АЛМАШЛАШЫУ** *ҡ.* Береһен береһе алмаштырыу. *Алмашлашып ҡарауыллау. Алмашлашып эшләү.*

**АЛМАШСЫ** *и.* Кемдеңдер урынына килеп, эшен, хеҙмәтен дауам иткән кеше йәки кешеләр төркөмө.

**АЛМАШ-ТИЛМӘШ** *р.* Береһен береһе алмаштырып; бер-бер артлы, алмашлап. *Алмаш-тилмәш тауыш бирешә һағышланған төнгө саҡсуктар.* Х. Ғәбитов. *Ирек .. ике еңе менән алмаш-тилмәш күҙҙәрен һөртгө.* З. Биишева.

**АЛМАШТЫРЫЛЫУ** *ҡ. төш. ҡар.* **алмаштырыу.**

**АЛМАШТЫРЫУ** *ҡ.* **1.** Үҙ-ара урындарын үҙгәртеп, береһе урынына икенсеһен күсереү. *[Ҡыҙ:] Уның ике мискә һыуы бар. Береһе көс бирә, икенсеһе — бөтөрә. Беҙ шул мискәләрҙе алмаштырып ҡуяйыҡ* (Әкиәттән)./Тиң ҡуйыу, тиңәү. *[Айбулат] донъялағы бөтә ҡиммәтле алтын, көмөштәргә алмаштырмаҫ был бүләкте.* Һ. Дәүләтшина.

**2.** Бер нәмә урынына икенсе нәмә ҡуйыу. *Алмаштырып китеү. Алмаштырып ҡуйыу. Исемде алмаштырыу. Йүргәкте алмаштырыу. Квартир алмаштырыу. Урын алмаштырыу. Эш алмаштырыу.* ■ *Атайым бөгөн иртә торҙо, алмаштырып кейҙе күлдәген.* С. Агиш. *Сәйәх ҡарт бисәһе менән, бер көнәк муйыл тиреп, ҡалаға алып барып, ун ҡаҙаҡлыҡ бер ҡаласҡа алмаштырған* (Әкиәттән)./Берәүҙең хеҙмәт урынына икенсе кешене ҡуйыу. *Ҡарауылды алмаштырыу.* ■ *[Ныязгол:] һуң һеҙ нишләп улай итеп мәңге йәшәгән хөкүмәтте алмаштырып ятаһығыҙ әле?*

һ. Дәүләтшина./Таҙа, саф итеү; яңыртыу, таҙартыу. *Һауаны алмаштырыу. Һыуҙы алмаштырыу.*

**3.** Берәй нәмәнән баш тартып, икенсеһенә күсеү; хыянат итеү. *Ҡарашты алмаштырыу. Илде алмаштырыу.*

**4.** Береһенән һуң икенсеһен ҡуйыу йәки һалыу, күтәреү һ. б.. *Аяҡты алмаштырыу. Ҡулды алмаштырыу.*

**5.** Бөткән, үткән нәмә урынында барлыҡҡа килеү. *Мамыҡ елдәр алмаштыра төнгө һалҡынды.* М. Абдуллин.

**6.** Аҡсаны бер ҡиммәттән икенсе ҡиммәткә күсереү. *Валюта алмаштырыу.*

◆ **Шайтан алмаштырыу** *шул уҡ* **ен алмаштырыу** (*ҡар.* **ен**[1]).

**АЛМАШЫНЫУ** *ҡ.* **1.** Үҙ-ара урын үҙгәреү. *Уларҙың ботинкалары алмашынған.*

**2.** Бер нәмә урынына икенсе нәмә килеү. *Урамдың исеме алмашынған икән.* ■ *Фатиманың күҙ алдына әле Татлыбай, әле Ҡадир килеп, .. алмашынып тик тора.* Б. Бикбай./Берәүҙең хеҙмәт урынын бүтән алыу. *Һуңғы ике-өс йыл эсендә 4 совхоз директоры алмашынды.* «Совет Башҡортостаны», 1965, 27 ғинуар.

**3.** Бөткән, үткән нәмә урынын икенсе нәмә алыу; үҙгәреү. *Урал артына сыҡҡас, күренеш ҡапыл алмашынып китә.* К. Мәргән. *Бөтә халыҡтың рәхәте хәсрәткә алмашынды.* М. Ғафури.

**4.** Аҡыл дөрөҫлөгөн юғалтыу, алмаша булыу. *[Йыһания — Тимербулатҡа:] һинең үле хәбәрең килгәс, [әсәйең] шулай алмашынып ҡалғайны, тәки рәтләнә алманы.* Ә. Атнабаев.

◆ **Күҙ алмашыныу** *ҡар.* **күҙ. Матдәләр алмашыныуы** *ҡар.* **матдә.**

**АЛМАШЫУ** *ҡ.* Бер үк төрлө нәмәне үҙ-ара бирешеү. *Урын алмашыу.* ■ *Улар [Айбулат менән Зөфәр] береһе аҙғанды икенсеһе алмашып уҡып төҙәттеләр.* Һ. Дәүләтшина. *Кейекбай ҡарт .. малының һуйғанын һуйып, алмашҡанын алмашып, һауып эсерлек бер кәзәһеҙ ҡала* (Әкиәттән)./Бер нәмәнән баш тартып, икенсе нәмәне ҡабул итеү. *[Әфәнде:] Бына балаларҙы үҫтерәһең, улар .., ислам динен христиан диненә алмаша.* Д. Юлтый.

◆ **Алмашыу ҡиммәте** *ҡар.* **ҡиммәт.**

**АЛМАЯРА** *и. диал.* Картуф гөлө.

**АЛМИҘЕҮ** *и.* Ҡатын-ҡыҙҙар күлдәгенең уҡатәңкәләр менән биҙәлгән алынмалы киң иҙеүе. *Алтын ғына тәңкә ай бирәйем, алмиҙеүкәйеңә баҫырһың* (Халыҡ йырынан).

**АЛОЙ** [*рус.* алоэ ⟨ *гр.*] *и.* Ләлә сәскәләр ғаиләһенә ҡараған итләҫ ҡыяҡ япраҡлы көньяҡ үҫемлеге.

**АЛО́Э** [*рус.* ⟨ *гр.*] *и. ҡар.* **алой.**

**АЛП** *и. иҫк.* Бик ҙур кәүҙәле, көслө батыр.// *Заманында ул [Мейтан] алп йөрәкле, халыҡ эсендә ғиззәтле [була].* «Башҡорт шәжәрәләре», 1960.

● *Алп ананан тыуыр, арғымаҡ бейәнән тыуыр.* Әйтем.

**АЛПАМЫША** *и.* **1.** (*баш хәреф менән*) Әкиәт батырының исеме.

**2.** *күсм.* Ҙур кәүҙәле көслө кеше.

**АЛПАНЛАУ** *ҡ.* Ян-яҡҡа аушанлау, һалп-һолп итеү (атлағанда). *Алпанлаған айыуы, мәсе күҙле бүреһе .. беҙгә һунар булмаҫ ул.* «Ҡараһаҡал».

**АЛПАН-ТОЛПАН** *р.* Ауыр баҫып, ян-яҡҡа аушанлап (атлау); һалп-һолп. *Шәрифулла алпан-толпан атлап, Нигмәтулланың артынан эйәрҙе. Я. Хамматов. Алпан-толпан атлаған айыуы күп Урал тау* (Ҡобайырҙан).

**АЛПАР** *и.* Батыр, көслө яугир.

● *Алпарына күрә толпары.* Әйтем.

**АЛПАУЫТ** *и. тар.* Эре ер биләүсе; помещик. *[Базы буйына] иң матур урынды һайлап, .. Готлунд тигән бер алпауыт килеп ултыра.* В. Исхаҡов.

**АЛПЫ-ТОЛПО** *р. ҡар.* **алпан-толпан.** *Зилский менән секретарь сананан ауа-түнә тороп, алпытолпо баҫып советҡа килеп инделәр.* Ғ. Дәүләтшин.

**АЛПЫ-ҺАЛПЫ** *с.* Ҡуҙғалыр-ҡуҙғалмаҫ йөрөүсән; иренсәк. *Алпы-һалпы кеше.*//*Алпы-һалпы йөрөү.*

**АЛСА** *и.* **1.** Гөлйемеш һымаҡтар ғаиләһенә ҡараған, емеше сейәнекенә оҡшаған көньяҡ ағасы.

**2.** Шул ағастың емеше.

**АЛСАЙЫУ** *ҡ.* Башты юғары күтәреп, аяҡтарҙы кирә баҫып тороу (эре йәнлектәр тураһында). *[Күсәрхан:] ... Бер болан күрҙем: атырға булып янымды алғайным, алсая баҫты ла торҙо* (Әкиәттән).

**АЛСАҠ** *с.* Асыҡ сырайлы, илгәҙәк, көләс. *Ғәләү эскерле түгел. Ул алсаҡ, ҡояш кеүек йылмайып тора.* Б. Бикбай.

**АЛСАҠЛАНЫУ** *ҡ.* Алсаҡҡа әйләнеү, алсаҡ булыу.— *Маһайыбыраҡ һөйләшә торған бер ҡырыҫ ҡатын ине был [Маһиҙәр]. Хәҙер нык үҙгәргән, алсаҡланған төҫлө.* Ҡ. Ибәтуллин.

**АЛСЫ** *и.* Ашыҡ уйнағанда ашыҡтың салҡан ятышы.

**АЛТАЙ** *и.* РСФСР-ҙың Алтай крайы Тау-Алтай өлкәһенең төп халҡы һәм шул халыҡтың бер кешеһе. *Алтай халҡы. Алтай ҡатыны. Алтай теле.*

◆ **Алтай телдәре** төрки, монгол, тунгус-манчжур телдәренең дөйөм атамаһы.

**АЛТАТАР** *и. иҫк.* Револьвер. *[Баяр] халыҡты ҡурҡытыу өсөн баш осонан алтатары менән атып ебәргән.* «Батыршаның хаты».

**АЛТАУ** *йыйн. һ.* Алты кеше йәки нәмә.— *Киттек әйҙә, бишәүҙән алтау яҡшы* (Әкиәттән).

● *Атанан алтау тыуһаң да, бәләң яңғыҙ башыңа.* Мәҡәл.

**АЛТАУЛАП** *р.* Алты кеше бергә. *Алтаулап эшләү.*

**АЛТАУЛАШЫП** *р.* Алты кеше бергәләшеп. *Алтаулашып эшләү.*

**АЛТАУЫҘ** *с. диал. яманл.* **1.** Ҙур ауыҙлы (кешегә ҡарата).

**2.** Ауыҙында һүҙ тормаған, һүҙ йөрөткән (кешегә ҡарата).

**АЛТМЫШ** *төп һ.* Алты тиҫтә. *Алты уның алтмыш.*/Кем йәки нәмәнең 60-ҡа тиң иҫәбе. *Алтмыш йәш. Алтмыш саҡырым.* ■ *Буҙансы батыр алтмыш аршынлы ҡыуал башына менеп киткән* (Әкиәттән).

● *Алтмышҡа еткән — кире киткән.* Әйтем.

**АЛТМЫШАР** *бүл. һ.* Һәр бере алтмышҡа тиң. *Алтмышар һум аҡса. Алтмышарҙан бүлеү.*

**АЛТМЫШЛАП** *сама һ.* Алтмыш тирәһе, алтмышҡа яҡын.

**АЛТМЫШЫНСЫ** *рәт һ.* Урын тәртибе 60 менән билдәләнгән. *Алтмышынсы бүлмә.*

**АЛТӨРӘН** *и.* Һабандың ҙур төрәне алдына ҡуйыла торған бәләкәй төрән (кәҫтең ҡыртышын һыҙырып бара).

**АЛТЫ** *төп һ.* 6 һаны. *Алты йөҙ. Өс алтың ун һигеҙ.*/Кем йәки нәмәнеңдер 6-ға тиң иҫәбе. *Алты аҙым. Алты ай.* ■ *Алты туған аттарына менә һалып, кем уҙарҙан сабышып китә* (Әкиәттән).

● *Алты йәшәр илдән килһә, алтмыш йәшәр каршы сығыр.* Мәҡәл.

**АЛТЫЛАП** *сама һ.* Алты тирәһе, алтыға яҡын. *Алтылап баш һарыҡ.*

**АЛТЫН** *и.* **1.** Химик элемент, һары төҫтәге йомшаҡ затлы металл (ҡиммәт бирәмеге булып хеҙмәт итә). *Саф алтын. Һары алтын. Алтын йыуыу. Алтын яткылығы. Алтын ялатыу.*//*Алтын аҡса. Алтын балдаҡ.* ■ *Алтын менән көмөш сыккан ерҙән тыуған гына үҫкән ил якшы* (Халыҡ йырынан). **Һум алтын** 1) саф алтын; 2) *күсм.* бик ҡәҙерле.

**2.** *иҫк.* Өс тинғә торошло боронғо аҡса бирәмеге. *Бер алтын. Биш алтын.*

**3.** Алтындан ҡойолған өс һумлыҡ, һуңғараҡ — биш, ун һумлыҡ аҡса. *Алтын менән түләү.* ■ *[Ныязгол:] Ер банкындагы йөҙ егерме алты мең алтын минең кулда буласаҡ, алла бирһә.* Һ. Дәүләтшина.

**4.** *күсм.* Байлыҡ, дәүләт. *Исхак иптәшенең был ҡыҙыулығына ла бирешмәне: — Харап икән! Ул аҡсалы булһа ла, яртакыл. Ә һин үҙең алтын бит ..* Һ. Дәүләтшина.

**5.** Бик яҡшы сифаттары менән айырылып торған нәмә. *Еркәйебеҙ алтын, һыуыбыҙ һалкын, Урал буйы кеүек ер ҡайҙа* (Халыҡ йырынан).

**6.** *эйл. ф.* **алтыным** Яратып өндәшеү һүҙе. *Бөттө, алтыным, бөттө,— тине Ҡадир, гәфү үтенгәндәй.* Б. Бикбай.

♦ **Аҡылы алтын [икән]** *кар.* **аҡыл. Алтын туй** *кар.* **туй** 2. **Алтын һары** алтын төҫөндәге һары. *Беҙҙең ферма алтын һары себештәр менән тулһын.* Ә. Ихсан. **Ҡулынан алтын тама** уңған кешегә ҡарата әйтелә.

● *Алтынды эҙлә таштан, акылды эҙлә баштан.* Әйтем. *Алтынды тут алмаҫ, һыуҙы ут алмаҫ.* Әйтем. *Ир акылы — бер алтын, ил акылы — мең алтын.* Мәҡәл. *Сабыр төбө һары алтын.* Мәҡәл. *Һүҙең көмөш булһа, тик тороуың алтын.* Мәҡәл.

**АЛТЫНБАШ** *и.* Ҡатмарлы сәскәләр ғаиләһенә ҡараған һары сәскәле эре ҡый үләне.

**АЛТЫН-КӨМӨШ** *и. йыйн.* Затлы металдар һәм улардан эшләнгән ҡиммәтле нәмәләр. *Алтын-көмөш яуып торганда ла, бүтән ерҙәр тыуган ил булмай* (Халыҡ йырынан).

● *Алтын-көмөш сыккан ерендә кәҙерле.* Әйтем.

**АЛТЫНЛАНЫУ** *к.* **1.** *төш. кар.* **алтынлау.** *Башкорт илкәйҙәрен утка тоткас, алтынланды уның [Тәфтиләүҙең] яурыны* (Халыҡ йырынан).

**2.** *күсм.* Алтын төҫөнә инеү; һарғайыу. *Агас япрактары алтынланып, көҙ йырҙарын йырлай урманда.* Ғ. Мәсғүт.

**АЛТЫНЛАТЫУ** *к. йөкм. кар.* **алтынлау.** *Бүзәкәев кантон эйәренең алтынлаткан икән ал ҡашын* (Халыҡ йырынан).

**АЛТЫНЛАУ** *к.* **1.** Алтын ялатыу, алтынға маныу./Алтын менән йәки алтын ҡатыштырып биҙәү. *Алты мыҫкал алтын алдым беләҙек алтынларга* (Халыҡ йырынан).

**2.** *күсм.* Алтын төҫкә индереү. *Сентябрь урмандарҙы, кырҙарҙы алтынлаган.*

**АЛТЫНСЫ** [1] *и.* Алтын менән эш иткән кеше; алтын оҫтаһы.

**АЛТЫНСЫ** [2] *рәт һ.* Урын тәртибе 6 менән билдәләнгән. *Алтынсы класс. Алтынсы урын.*

**АЛТЫШАР** *бүл. һ.* Һәр береһе алтыға тиң. *Алтышар бот иген.*

**АЛТЫШАРЛАУ** *к.* Алтышар-алтышар итеү, алтышар-алтышар булыу. *Алтышарлап бүлеү.*

**АЛТӘКМӘК** *и. диал.* Арбаның кендектән һурыла торған алғы өлөшө.

**АЛФАВИТ** [*рус.* ⟨ *гр.*] *и.* Яҙма телдәге хәрефтәрҙең билдәле бер тәртип менән ҡуйылған теҙмәһе; азбука. *Ғәрәп алфавиты. Латин алфавиты. Алфавит тәртибе.*

♦ **Алфавит буйынса (***йәки* **тәртибендә)** һүҙҙәрҙе тәүге хәрефтәренә ҡарап, алфавит тәртибе менән.

**АЛХИМИК** [*рус.*] *и.* Алхимия менән шөғөлләнгән кеше.

**АЛХИМИЯ** [*рус.* ⟨ *лат.* ⟨ *гәр.*] *и.* Ябай металды алтынға әйләндереү, бөтә ауырыуҙан дауа була торған «философик таш» эҙләү менән шөғөлләнгән урта быуат мистик фәне.

**АЛҺЫҘ-ЯЛҺЫҘ** *р.* Һис туҡтауһыҙ. *Алһыҙ-ялһыҙ илау.* ■ *Һуғыш йылдары. Ауыл кешеләре ил һаксыларына аҙык әҙерләй, алһыҙ-ялһыҙ эшләй.* «Совет Башҡортостаны», 1967, 27 ғинуар.

**АЛҺЫУ** *с.* **1.** Аҡһыл ал. *Алһыу сәскә. Алһыу таң.* ■ *Акселән буйҙарын йока алһыу нурга манып,.. таң атып килә ине.* Б. Бикбай.

**2.** (*баш хәрәф менән*) Ҡатын-ҡыҙ исеме.

**АЛҺЫУЛАНДЫРЫУ** *к.* Алһыу төҫкә индереү, алһыу итеү.

**АЛҺЫУЛАНЫУ** *к.* Алһыу төҫкә инеү, алһыуға әйләнеү; алланыу. *Алыҫ офок өҫтө алһыулана, акрын гына һыҙылып таң ата.* Х. Ҡунаҡбай.

**АЛҺЫУЛАТЫУ** *к. кар.* **алһыуландырыу.**

**АЛҺЫУЛАУ** *к.* Алһыу төҫкә индереү, алһыу итеү; алһыуландырыу. *Смольныйҙың ак стеналарына ла .. таң кыҙыллыгы төшә, уны алһыулай.* Һ. Дәүләтшина.

**АЛЪЮҪЫҠҠА** *р.* **1.** Һис бер эш-шөғөлһөҙ; буштан-буш, бушҡа. *Былай өндәшмәй-нитмәй алъюҫыкка йөрөү бик уңайһыҙ бит инде.* Т. Йәнәби. *Алъюҫыкка килмәгәндер, йомошо барҙыр.*/Һис бер көс, мал түкмәй; буштан-бушҡа. *[Акназар спекулянттың] шул ике арала гына алъюҫыкка ике һум файҙа алганын күреп аптыраны.* Ғ. Дәүләтшин.

**2.** Һис сәбәпһеҙгә; бер ҙә юҡҡа, ерле юҡҡа. *Ниңәлер [Шакирҙың] күңеле елкенде, алъюҫыкка йөрәге ярһыны.* Ә. Чаныш.

**АЛЪЯБЫУ** *и. диал.* Алъяпҡыс. *Әсәкәйем биргән алъябыу ун ике лә төрлө ҡайыулы* (Бәйеттән).

**АЛЪЯПҠЫС** *и.* Өҫ кейеме бысрамаһын өсөн, алға бәйләй торған япма. *Аҡ алъяпҡыс. Алъяпҡыс бауы. Сигеүле алъяпҡыс. Селтәрле алъяпҡыс.* ■ *[Йәш ҡатын] алъяпҡыс кеҫәһенән түңәрәк көҙгө алып, биттәрен һыйпаштырҙы.* М. Тажи.

**АЛЪЯУ** *ҡ. ҡар.* **алйыу.**

**АЛЫМ**[1] *и.* Ниҙер эшләгәндә бер иңләп үтерлек ара; ал, алдырым. *[Ҡорбандың атаһы:] Әйҙә, тиҙерәк китәйек, юҡ нәмәне көтөп, бер алым урырлыҡ ваҡытты әрәмгә үткәрҙек.* С. Ҡудаш./ Ниҙер иңләп, биләп алырлыҡ ара; киңлек. *Аҙымдың алымы.* ■ *Күҙ алымы ерҙән күренеп ята Урал тауҙарының күк ташы* (Халыҡ йырынан).

**АЛЫМ**[2] *и.* Ниҙелер башҡарыу, үтәү юлы; ысул. *Бейеү алымы. Методик алым. Әҙәби алым. Эш алымы.*

● *Алғыр кеше алымынан билдәле.* Мәҡәл.

**АЛЫМ**[3] *и.* Йомошо төшкән кешенәи тейешһеҙгә алынған йәшерен хаҡ; ришүәт. *Алым алыу. Алым биреү.*

**АЛЫМЛАУ** *ҡ.* **1.** Алым-алымға бүлеү (берәй нәмә эшләгәндә). *Алымлап урыу.*

**2.** Киң итеп иңләү. *Алымлап атлау.*

**АЛЫМЛЫ** *с.* Киң иңләп ала торған. *Алымлы салғы.*

**АЛЫМСЫ** *и.* Алым ала торған кеше; ришүәтсе.

**АЛЫН** *и. диал. ҡар.* **ал**[2].

**АЛЫНАРБА** *и. диал.* Алтәкмәк.

**АЛЫНЛАУ** *ҡ. диал. ҡар.* **алымлау** 1.

**АЛЫНМА** *с. ҡар.* **алынмалы.**

**АЛЫНМАЛЫ** *с.* Алына торған; алып кире ҡуймалы; алмалы, алынма. *Умартаның түбә .. алынмалы була.* З. Байбурин.

**АЛЫНЫУ** *ҡ. төш. ҡар.* **алыу** 3—11, 14—20, 23—25.

**АЛЫП** *бәйл.* Сығанаҡ килештәге һүҙҙәр менән ваҡыт йәки урындың башлаиғыс сигеи белдерә. *Яҙҙан алып көҙгә тиклем.* ■ *[Күл батшаһы:] Заятүләк, һин бөгөндән алып үҙеңә баш.* «Заятүләк менән Һыуһылыу».

**АЛЫПҺАТАР** *и.* Арзанға алып, ҡиммәткә һатып йөрөгән кеше; сауҙагәр. *[Буржуазия] эшсе бараҡтары янында араҡы лавкалары аса, Шәғәле шикелле һәр төрлө алыпһатарҙарҙы, ростовщиктарҙы ебәрә.* К. Мәргән.

**АЛЫҪ** *с.* **1.** Оҙон ара менән айырылған; йыраҡ; киреһе яҡын. *Алыҫ ара. Алыҫ ер. Алыҫ ил.* ■ *Алыҫ төпкөлдә ..шатыр-шатор ағастар һынғаны ишетелә.* З. Биишева. *Өйҙән алыҫ түгел ерҙә бик күп йылҡы өйөрө йөрөп ята* (Әкиәттән). Ситтә, ҡырҙа булған. *Бысаҡ телле кешенең алыҫыраҡ булғаны хәйерле.* Б. Бикбай.//*Елмерҙәкәй тауы алыҫ ҡалды, бер йырламай күңелем баҫылмай* (Халыҡ йырынан)./*и. мәғ.* Ҙур ара. *Салауат тиңһеҙ арыҫлан, арыҫландай алышҡан, уғы алған алыҫтан.* Ш. Бабич.

**2.** Оҙон аралы, оҙаҡ, дауамлы. *Алыҫ сәйәхәт.* ■ *Каруансылар килә ай теҙелеп, Бохараның алыҫ юлынан* (Халыҡ йырынан).//*Ҡуҙыйкүрпәс, инде бараһы юлым алыҫ ҡалмаған икән, тип шатланды, ти.* «Ҡуҙыйкүрпәс менән Маянһылыу».

**3.** Күп ваҡыт араһы менән айырылған. *Алыҫ киләсәк.*//*Алыҫ, бик алыҫ ҡалды инде ул ваҡыттар.* Б. Бикбай.

**4.** Бер нисә быуынға айырмалы. *Алыҫ туған.* ■ *[Мәғфүрә:] Сәлимә еңгәм, бахыр, алыҫ булһа ла, Ныяҙғол ҡайнағаға еңгә тей [ештә] баһа.* Һ. Дәүләтшина.

♦ **Алыҫ ерҙе яҡын итеп [килеү]** ара алыҫлығына ҡарамай, бик теләп килгәндә әйтелә. **Алыҫ йөрөйһө юҡ** табыуы еңел, әллә ҡайҙан эҙләйһе юҡ, тигән мәғәнәлә әйтелә. **Алыҫ китмәгән** *кәмһ.* ныҡ айырылмаған, оҡшаған. **Алыҫ китмәҫ** (*йәки* **ҡасмаҫ**) кеше хәленән көлөргә, мыҫҡылларға ярамай, тигәндә белдергәндә әйтелә. *«Көлмә, ҡустым, ул рәнйеү һинән дә алыҫ китмәҫ»,— тине Мөстәҡим ҡарт.* С. Кулибай.

● *Алма ағасынан алыҫ төшмәй* Мәҡәл. *Алыҫ ҡунаҡ килеп еткән, ауылдағы йоҡоға киткән.* Әйтем. *Алыҫ менән яҡынды юртҡан белер.* Мәҡәл.

**АЛЫҪАЙТЫУ** *ҡ.* Алыҫ итеү, йыраҡайтыу. *Алыҫайта төҫлө ҡауышыу көнөн бөгөн эшләмәйсә ҡалған эш.* Х. Ғиләжев.

**АЛЫҪАЙЫУ** *ҡ.* **1.** Алыҫ ара алыу; йыраҡайыу, алыҫлашыу. *Арбалар алыҫайҙы. Ары киткән һайын йыр тауышы әкренәйә.* Һ. Дәүләтшина.

**2.** Ҙур ваҡыт араһы менән айырылыу. *Йәшлек заманы алыҫайған һайын онотола, төш кеүек кенә ҡала бара.*

**АЛЫҪЛАНЫУ** *ҡ. ҡар.* **алыҫайыу.**

**АЛЫҪЛАТЫУ** *ҡ. ҡар.* **алыҫайтыу.**

**АЛЫҪЛАШТЫРЫУ** *ҡ.* Алыҫҡа, ситкә табан күсереү; алыҫайтыу. *Араны алыҫлаштырыу.*

**АЛЫҪЛАШЫУ** *ҡ.* **1.** Алыҫҡа, ситкә табан китеү; алыҫайыу .. *Алыҫлашҡан һайын, Өфө тауы бейекләнгән төҫлө күренә.* Н. Нәжми.

**2.** *күсм.* Ике аралағы мөнәсәбәттә берҙәмлек хисен юғалтыу; һыуыныу. *Күңелдең теләге был ҡыҙҙан алыҫлашыу ине.* Т. Йәнәби.

**АЛЫҪЛЫҠ** *и.* **1.** Ике нәмәне айырған ара. *Алыҫлыҡ берәмеге.* ■ *Шәлъяулығым биҙәкле, ҡыҙығам биҙәгенә, араларҙың алыҫлығы үтте бит үҙәгемә* (Халыҡ йырынан).

**2.** Күҙ күреме ергә һуҙылған аралыҡ. *Һыбайлылар юл алдылар ялан алыҫлығына.* М. Сөндөклө.

**АЛЫУ** *ҡ.* **1.** Ҡул (йәки сәнске һ. б. нәмә) менән тотоп үҙеңә ҡабул итеү. *Ҡулға алыу. Сәнске менән алыу.* ■ *[Старшина] ҡулындағы ҡамсыһын алып, Сейәбикәнең башынан аша бер-ике тартып ебәр[ҙе].* Т. Хәйбуллин. *[Ҡарағаш] ҡурайҙы алды ла, бер бейеү көйөн тарта башланы* (Әкиәттән)./Ҡул менән тотоу; эләктереү. *Аттың башынан алыу. Билдән алыу. Боғаҙҙан алыу. Яғанан алыу.* ■ *Мәрйәм .. минең ике ҡулымды алып ныҡ ҡыҫты.* Д. Юлтый. *Алпамыша Ҡолтүбәнең елкәһенән алып, .. халыҡҡа тотороп сығарҙы, ти.* «Алпамыша».

**2.** *күсм.* Ниндәйҙер эшкә тотоноу, ҡулға тотоп эшләү. *Ҡулға эш алыу.* ■ *Яңы ғына инем ҡолонсаҡ, көйәнтәләр алыуым яңы саҡ.* (Сеңләүҙән).

**3.** Үҙеңә тәғәйенләнгәнде, ебәрелгәнде ҡабул итеү. *Бүләк алыу. Хаҡ алыу. Һалым алыу. Теле-*

*грамма алыу. Хат алыу. Хәбәр алыу. Отпуск алыу.* ■ *Айбулат .. яҙыу яҙа белмәгән Гөлйөҙөмдән Яланбикә аша тел яуабы алды.* Һ. Дәүләтшина. *Көҙ еткәс, эш хаҡы алырға тип [көтөүсе] байға килә* (Әкиәттән). *Алмағаста биш алма, мин алмаһам, һин дә алма* (Халыҡ йырынан)./Ҡулға төшөрөү. *Ҡарамаҡай дуға, ай күк юрға, ҡайҙан ғына алдың был атты* (Халыҡ йырынан).

**4.** Үтәү, башҡарыу өсөн тапшырылғанды ҡабул итеү. *Бойороҡ алыу. Күрһәтмә алыу. Кәңәш алыу.*

**5.** Билдәле бер мәғәнәлә уй-күңелгә ҡабул итеү. *Ғәйепкә алыу. Насарға алыу. Уйынға алыу. Ысынға алыу.* ■ *Аҡыллы кеше уның һүҙен һүҙгә аламы.*/Тейешһеҙ эш-ҡылығындың ҡоһорон ҡабул итеү. *Елкәгә алыу. Яңаҡҡа алыу.*

**6.** Үҙ яуаплылығыңа, үҙ өҫтөңә ҡабул итеү. *Бурыс алыу. Йөкләмә алыу. Эш алыу. Яуаплылыҡ алыу. Ғәйепте үҙ өҫтөңә алыу.*/Башҡа төшөүенә, алға килеүенә юл ҡуйыу. *Башҡа бәлә алыу. Үҙенә ҡайғы алыу. Мәшәҡәт алыу.* ■ *[Сәгиҙә — бабайға:] Кеше күңелен табам тип, үҙегеҙгә ауырлыҡ ала күрмәгеҙ.* М. Тажи.

**7.** Көс-хәл түгеп, ниндәйҙер килемгә ирешеү. *Доход алыу. Уңыш алыу. Файҙа алыу.* ■ *Аҡназар быйыл [сәскән еренән] йөҙ егерме бот арыш алды.* Ғ. Дәүләтшин.

**8.** Ҡайһы бер исемдәр менән килеп, шул исем аңлатҡан эш-хәрәкәтте белдерә. *Дан алыу. Ҡарғыш алыу. Ҡушамат алыу. Рәхмәт алыу. Шелтә алыу. Яманат алыу. Имтихан алыу. Ирек алыу. Мөмкинлек алыу. Ризалыҡ алыу. Рөхсәт алыу. Хоҡуҡ алыу. Ял алыу.* ■ *Һәр бер ярлы, мазлум, иҙелгән ил мөхтәриәт алһын, терелһен.* Ш. Бабич.

**9.** Яңы сифат бирерлек нәмәгә эйә булыу, ҡаҙаныу. *Белем алыу. Тәжрибә алыу. Тәрбиә алыу. Илһам алыу. Көс алыу. Ләззәт алыу. Тәьҫир алыу.* ■ *Мәҙрәсәлә уҡыр өсөн, ирҙәр булып кейендек. Хат уҡырлыҡ ғилем алғас, шуға икәү һөйөндөк* (Бәйеттән).

**10.** Кеше ҡулынан һалдырып, эйә булыу. *Малды алыу.* ■ *Алдылар беҙҙең яҡшы еребеҙҙе, ғуж өйөрө килеп баҫты илебеҙҙе* (Бәйеттән). *Төрөктәрҙең крепостарын һуғыш менән алдыҡ беҙ* (Бәйеттән)./Бер-берәүҙең урынын, вазифаһын һалдырып, эйә булыу. *Кешенең урынын алыу.* ■ *Түрҙән урын алығыҙ, һары балды һалығыҙ* (Халыҡ йырынан)./Ярышта, көрәштә ниндәйҙер урынды яулап, үҙеңә беркетеү. *Беренселекте алыу. Өҫтөнлөк алыу.* ■ *— Әйҙә, Фәхри,— тине Саҡай,— шул бәйгеләренә барып, алдынғылыҡ алып, дан күтәреп ҡайтайыҡ.* Б. Бикбай./*күсм.* Кешенең уй-күңелен ҡаратыу, йәлеп итеү. *Күңелде алыу. Иғтибарҙы алыу.*

**11.** Йәшерен юл менән кешенекен үҙләштереү; урлау.

**12.** Киткәндә янығыҙдан ҡалдырмау. *Бабай менән әбей алтындарын алып баш һуҡҡан яҡҡа сығып китә* (Әкиәттән). *Ҡотлояр ауылға инә Ҡыҙы Диләне лә бергә ала.* Һ. Дәүләтшина.

**13.** Ҡайҙалыр үҙ янығыҙа урынлаштырыу, урын биреү. *Алға алыу. Ҡосаҡҡа алыу. Ҡуйынға алыу. Уртаға алыу. Эргәгә алыу.* ■ *[Бураншa] Ирйегетте үҙ кәмәһенә алған.* З. Биишева.

**14.** Алмашына аҡса биреп нәмәләр үҙеңдеке итеү. *Алты метр тауар алдым.* ■ *Һатыусынан тараҡ алдым, сәскәйемде майлап тарарға* (Халыҡ йырынан).

**15.** Эшләй йәки уҡый торған урынға ҡабул итеү. *Университетҡа алыу. Фабрикаға алыу.* ■ *Мине ялсы итепме, көтөүсе итепме эшкә алмаҫһығыҙмы икән, бай ағай? — тип һораған Оморҙаҡ* (Әкиәттән)./Берәй ойошма йәки төркөмгә ағза итеп ҡабул итеү. *Партияға алыу.* ■ *Колхозсылар йыйылышында тағы өс кешене колхозға алдылар.* М. Тажи./Хәрби хеҙмәткә ҡабул итеү. *Һалдатҡа алыу.* ■ *Һуғышҡа тип алдылар, бәхетлеләр ҡалдылар* (Бәйеттән).

**16.** Тотҡон хәлгә төшөрөү. *Яулап алыу. Пленға алыу. Һаҡ аҫтына алыу.*/*Үҙ ҡарамағың йәки* хәстәреңә ҡабул итеү. *Ҡарарға алыу. Тәрбиәгә алыу. Ашҡа алыу. Ҡунаҡҡа алыу. Сәйгә алыу.*/ Ҡайҙалыр теркәү, нәмәләр иҫәбенә индереү. *Исемлеккә алыу. Иҫәпкә алыу. Ҡағыҙға алыу.* ■ *Кулактың йорт йыһаздарын описка алыу башланды.* Б. Бикбай.

**17.** Өйләнеү. *Бисә алыу. Килен алыу. Кәләш алыу. Ҡатын алыу.* ■ *Алыр булһаң, яусы ебәр, алмаҫ булһаң алдама* (Халыҡ йырынан).

**18.** Урынынан ситкә ҡуҙғатыу. *Ҡырға алыу.* ■ *Ал, йыйыштыр, түйҙым,— тине Айбулат.* Һ. Дәүләтшина. *Батшаның вәзирҙәре арғымаҡ аттар менеп, Кейеҙбайҙы алырға киткән* (Әкиәттән)./ Төркөм эсенән сығарыу. *Аранан алыу.* ■ *Ҡарт һалдаттарҙы стройҙан алдылар.* Д. Юлтый./ Биләгән урынынан, эшенән төшөрөү. *Уҡытыусылыҡтан алыу.* ■ *[Йыһаншин:] Солтанов иң ҡыҫҡа ваҡыт эсендә ныҡлы һыныһыш яһамай икән ... эшенән алып, судҡа бирергә кәрәк булыр.* Б. Бикбай.

**19.** Нәмәләр береккән, тоташҡан йәки тейеп торған нәмәне айырыу. *Арбаның тәгәрмәсен алыу. Тәҙрәне алыу.* ■ *Башыңдағы шәлен алһаң, кеше ҡарар һыны юҡ* (Ҡобайырҙан)./Нәмәләр йәки нәмәләр эсенән бер нәмәһен йәки бер өлөшөн сығарыу. *Соҡорҙан тупраҡ алыу.* ■ *Ҡындан алып алмас ҡылысымды Урал ташҡайына ҡайрайым* (Халыҡ йырынан). *Көләс ҡыҙҙар йылғаларҙан бөгөләп-бөгөләп һыу ала* (Халыҡ йырынан).

**20.** Эшкәртеп, айырып сығарыу. *Диңгеҙҙән тоҙ алыу. Нефттән бензин алыу.*/*күсм.* Нәмәләр бер сифатын йәки булған бер нәмәһен юҡ итеү. *Иҫте алыу. Йоҡоно алыу. Көстө алыу. Ҡотто алыу. Нәмәләр төҫөн алыу. Һаулыҡты алыу.* ■ *Туңмай бауырһаҡтың тәмен ала ул.* Һ. Дәүләтшина. *Батыр егет, Алпамыша, тынысһығым һин алдың.* «Алпамыша».

**21.** Аулап ҡош, йәнлек тотоу. *Айыу алыу. Өйрәк алыу.* ■ *Ҡапҡан һалдым Ҡараташҡа күк бүрене алам тип* (Халыҡ йырынан).

**22.** Уратып биләү, баҫыу. *Сборный пункт .. бер кварталдай урынды алған оҙон аҡ кирбес йортта ине.* Һ. Дәүләтшина./Тотош таралып биләү, тотош ҡаплау. *Күҙен ҡан алған. Туғайҙы ут алған. Тимерҙе тут алған.* ■ *Урал һыртын монар алған, Урал буйын тал алған* (Халыҡ йырынан)./*күсм.* Бөтә тәнде, йәки күңелде биләү. *Башты эҫе алған. Тәнде һыуыҡ алған. Аптырау алды. Ҡайғы*

*алды. Һағыш алды. Шом алды. Уй алды.* ■ *Кискә табан быуындарҙы ҡалтырау алды.* Д. Юлтый. *Сәңгелдәктә йоҡлай бала, йөрәгемде сәнсеү ала.* Н. Нәжми. *Ҡарағөләмбәттең күңелен ҡурҡыу ала.* «Бабсаҡ менән Күсәк». *Уйлап йөрөйөм көн буйы, йоҡо алмай төн буйы* (Халыҡ йырынан).

**23.** Тәьҫир көсө менән нимәнелер еңеү, бирештереү. *Шунан бирле авангардтан ҡалманым. Мине ут та һәм пуля ла алманы.* М. Кәрим. *Артыҡ нескә булма, эй һин, бала, нескә гөлдө ҡырау тиҙ ала.* К. Даян./Ҡорал-ҡорамалдың эште башҡарыу мөмкинлегенә ҡарата әйтелә. *Бәке һаҡалды яҡшы ала. Оҙаҡ ятҡан ҡарағасты бысҡы ла алмай.*/Күпмелер алыҫлыҡҡа өлгәшеү, етеү. *Салауат тиңһеҙ арыҫлан .., арыҫландай алышҡан, уғы алған алыҫтан.* Ш. Бабич. *Беҙҙең аттар күк ала, әкрен баҫып күп ала* (Халыҡ йырынан).

**24.** Ниндәйҙер тарафҡа йүнәлеү. *Һыу уртаһына етәрәк тракторист .. уңғараҡ алды.* Б. Бикбай. *Кире аҙамат йорт көтһә... ҡурҡытам тип екерер, яҡшылыҡҡа тиреҫ алып, яғанан тотоп һиңкетер* (Ҡобайырҙан)./*күсм.* Билдәле бер ыңғайға килтереү, ыңғайға һалыу. *Көйҙө дөрөҫ алыу.* ■ *Новиков һүҙҙең ибен уңышлы алды.* Д. Юлтый./ Ниндәйҙер рәүешкә, ҡиәфәткә килеү. *Был ҡунаҡ ашы ... йыйылыш төҫөн алды.* Һ. Дәүләтшина.

**25.** Бер һанды ниндәйзер икенсе һан дәүмәленә кәметеү. *Биштән икене алыу. Ундан биште алыу. Алыу билдәһе.*

**26.** Хәл ҡылымдың *-ып* формаһында башҡа ҡылымдар менән ҡушма ҡылым яһай. *Алып ҡарау. Алып ҡуйыу. Алып уҡыу. Алып ятыу. Алып барыу. Алып биреү. Алып инеү. Алып ҡалыу. Алып ҡасыу. Алып менеү. Алып сығыу.*

**27.** *ярҙ.* Хәл ҡылымдың *-ып* формаһындағы һүҙ менән ҡушма ҡылым яһай: 1) эш-хәрәкәткә тулылыҡ мәғәнәһе бирә. *Уратып алыу. Һырып алыу;* 2) эш-хәрәкәткә ҡапыллыҡ һәм дауамһыҙлыҡ мәғәнәһе бирә. *Күтәреп алыу. Ҡарап алыу. Ҡырҡып алыу. Үбеп алыу. Һуҡҡылап алыу;* 3) эш-хәрәкәткә сикләнгәнлек, әҙлек мәғәнәһе бирә. *Ашап алыу. Йоҡлап алыу. Эсеп алыу;* 4) эш-хәрәкәткә һөҙөмтәлек мәғәнәһе бирә. *Аңлап алыу. Белеп алыу. Төшөнөп алыу. Һиҙеп алыу;* 5) эш-һөнәрҙе йәки берәй сифатты белдергән һүҙ һәм «булып» хәл ҡылымы менән бәйләнештә үҙенә кәрәк һөҙөмтәгә ирешеү мәғәнәһе бирә. *Бригадир булып алыу. Уҡытыусы булып алыу.*

**28.** *ярҙ.* Хәл ҡылымдың *-ып* формаһындағы һүҙ менән һәм үҙе шул уҡ формала ҡушма ҡылым составында килеп, эш-хәрәкәттең башҡаныуын һәм ары дауам итеүен белдерә. *Уҡып алып китте. Эшләп алып китте.* ■ *Бабай асыуланып атын әрләп алып китә* (Әкиәттән).

**29.** *ярҙ.* Хәл ҡылымдың *-а(й)/-ә(й)* формаһындағы һүҙ менән килеп, мөмкинлек, мөмкин түгеллек формаһы яһай. *Уҡый алманы. Һөйләй алманы.* ■ *Ул бөгөн баҙарға бара алырмы икән?*

♦ **Алып барыу** эшләү, башҡарыу. *Көрәш алып барыу.* ■ *Колхоздар игенселек эшен хәҙер фән ҡушҡанса алып бара.* «Совет Башҡортостаны», 1969, 20 март.

● *Алыуҙың биреүе бар.* Әйтем. *Бай тапһа — көтлө булһын, ярлы тапһа — ҡайҙан алдың.* Әйтем. *Бер көнлөк юлға сыҡһаң, аҙналыҡ аҙыҡ ал.* Әйтем. *Донъяны һыу алғандан өйрәккә ни ҡайғы.* Мәҡәл. *Иртә сыҡҡан юл алыр.* Әйтем. *Ҡуян алмаҫ артынан ҡалмаҫ.* Мәҡәл. *Ҡәйнәмә баш һалдым, башыма таш алдым.* Мәҡәл. *Өйрәк бирһәң, ҡаҙ алырһың.* Мәҡәл. *Төймә алһаң да — бурлыҡ, дөйә алһаң да — бурлыҡ.* Мәҡәл.

**АЛЫУАН: бер алыуан** *диал.* Бер ни тиклем, бер талай. *Бынау егет бер алыуан ерҙе ҡалай оҫта сапҡан.*

**АЛЫУЫС** *и. иҫк.* Ҡаҙан төбөнән һыу-фәләнде ҡалдырмай алыу өсөн туҙҙан эшләнгән оҙонса сүмес.

**АЛЫШ**[1] *и.* Көс һынаш, ярыш, көрәш. *Алыш майҙаны. Һүҙ алышы.* ■ *Мәргәндәрҙең хәле беленә атыштарҙа, көрәшсенең көсө күренә алыштарҙа.* С. Ҡудаш./Ике аралағы бәрелеш, һуғыш. *Бөтә табын йорто ҡатайҙарға ташланған. Алыш ҡаты булған.* Ә. Вахитов.

♦ **Алыш кәрәкме, атыш кәрәкме** икәү ара һуғышырға саҡырғанда әйтелә. *Аҡмырҙа, ҡылысын һуҙып, күпер аҫтынан сыҡҡан. «Алыш кәрәкме, атыш кәрәкме?» — тигән дейеү уға* (Әкиәттән).

**АЛЫШ**[2] *и. иҫк.* Дуҫ.

● *Тапҡан — табыш, таныған — алыш.* Мәҡәл.

**АЛЫШ-БИРЕШ** *и.* **1.** Ниҙәлер ике арала алмашып биреш. *Үҙ-ара алыш-бирешкә инеү.*

**2.** Һатыу-алыу эше; сауҙа. *Алыш-биреш итеү.* ■ *Ауылға ҡайтҡан сакта Гәрәй сауҙа, алыш-биреш өлкәһендә тамам шымарып, ҡыл йыуғысҡа әйләнеп өлгөргән ине инде.* Б. Бикбай.

**3.** Үҙ-ара бәйләнеш, мөнәсәбәт. *Был көндәрҙә минең донъя менән алыш-бирешем, дөрөҫө, һис бер бәйләнешем ҡалмаған ине.* М. Ғафури.

**АЛЫШТЫРЫУ** *ҡ. ҡар.* **алмаштырыу.**

**АЛЫШЫНЫУ** *ҡ. ҡар.* **алмашыныу.**

**АЛЫШЫУ**[1] *ҡ.* **1.** *урт. ҡар.* **алыу** 1, 7, 10, 17. *Көрәшселәр уртаға сығып, билдәренән алыша.* «Ҡуҙыйкүрпәс менән Маянһылыу».

**2.** Бер-береңә бирешеү; уртаҡлашыу. *Фекер алышыу. Хәбәр алышыу. Һүҙ алышыу. Сер алышып сәй эсеү.*

**АЛЫШЫУ**[2] *ҡ.* Ярышта көс һынашыу. *Ярыштың тәүге көнөндә егеттәр ҡылыс менән алыштылар.*|Бәрелешеү, һуғышыу. *Салауат батыр ир ине, менгән аты кир ине. Дошман менән алышҡанда ил эсендә бер ине* (Халыҡ йырынан).

**АЛЫШЫУ**[3] *ҡ. ҡар.* **алмашыу.**

**АЛЬБАТРО́С** [*рус.* ⟨ *фр.*] *и.* Оҙон суҡышлы, нәҙек оҙон ҡанатлы ҙур диңгеҙ ҡошо.

**АЛЬБИНИ́ЗМ** [*рус.* ⟨ *фр.*] *и.* Үҫемлектәрҙә, йән эйәләрендә нормаль булмаған төҫһеҙлек.

**АЛЬБИНО́С** [*рус.*] *и.* Альбинизм билдәләре булған үҫемлек йәки йән эйәһе.

**АЛЬБО́М** [*рус.* ⟨ *фр.*] *и.* **1.** Төрлө һүрәт йәки шиғыр өсөн эшләнгән ҡалын дәфтәр. *Фото альбомы. Маркалар альбомы.* ■ *Альбомың алдымда, әммә ни яҙайым, белмәгәс.* Ш. Бабич.

**2.** Бер тема буйынса тупланған һүрәттәр, чертеждар һ. б. йыйылмаһы. *Халыҡ сәнғәте альбомы.*

**АЛЬМАНА́Х** [*рус.* ⟨ *фр.* ⟨ *гәр.*] *и.* Замандаш авторҙарҙың әҙәби, тарихи, публицистик әҫәрҙәрҙән төҙөлөп, ваҡыт-ваҡыт сыға торған йыйынтыҡ.

**АЛЬПИНИ́ЗМ** [*рус.* ⟨ *фр.*] *и.* Бейек тауҙарға менеү спорты.

**АЛЬПИНИ́СТ** [*рус.* ⟨ *фр.*] *и.* Альпинизм менән шөғөлләнгән кеше.

**АЛЬТ** [*рус.* ⟨ *ит.*] *и.* **1.** Балаларҙағы ҡалын тауыш.

**2.** Түбән тауыш сығара торған ҡыллы йәки тынлы музыка ҡоралы.

**АЛЬТЕРНАТИВ** [*рус.* альтернативный] *с.* Берен-бере кире ҡаҡҡан ике йәки бер нисә мөмкинлектең береһен һайлауға нигеҙләнгән.

**АЛЬТЕРНАТИ́ВА** [*рус.* ⟨ *фр.*] *и.* Берен-бере кире ҡаҡҡан ике йәки бер-нисә мөмкинлектең береһен һайлау кәрәклеге. *Яңылыҡ менән иҫкелек нисбәте тураһындағы мәсьәлә фәнни планда бар ҡасан да альтернатива .. рәүешендә, йә яңыса, йә иҫкесә тип, ҡырт өҙөп ҡуйылманы.* «Ағиҙел», 1966, № 11.

**А́ЛЬФА** *и.* Грек алфавитының беренсе хәрефенең исеме.

**А́ЛЬФА-НУРҘАР** *физ.* Матдәләрҙең радиоактив тарҡалышы ваҡытында барлыҡҡа килгән ыңғай зарядлы өлөшсәләр (гелий атомы ядролары) ағымы.

**АЛЮМИН** [*рус.* алюминий ⟨ *лат.*] *и.* Химик элемент, аҡ төҫтәге йомшаҡ еңел металл. *Саф алюмин.//Алюмин ҡатышма. Алюмин ҡалаҡ. Алюмин һауыт.*

**АЛ-ЯЛ: ал-ял белмәү** *шул уҡ* **алды-ялды белмәү** (*ҡар.* **алды-ялды).**

**АМАЛЬГА́МА** [*рус.* ⟨ *фр.*] *и.* Металдың терегөмөш менән ҡушылған иретмәһе. *Тешкә пломба һалыу өсөн махсус цемент һәм амальгамалы металл [баҡыр, көмөш] ҡулланыла.*

**АМАН** [*гәр.*] *с. һир.* Иҫән-һау, имен. *Һай, Ерәсә, һаман бул аман.* С. Кулибай. *Күҙҙәре ҡайнай йәһәннәмдән яман. Күренмәһен күҙгә, аман, раббым, аман.* Ш. Бабич.

● *Ай йөрө, аман йөрө.* Әйтем.

**АМАНАТ** [*гәр.*] *и.* **1.** Һаҡларға ҡушып бирелгән нәмә. *[Йыһан:] Сәрүәр, балаҡайым, һиңә бер аманат бар ине. Шуны кеше юкта тапшырайым әле.* Х. Ибраһимов.

**2.** Әйтеп ҡалдырылған һүҙ, үтәлергә тейеш булған васыят. *Боронғолар үҙҙәренең ҡобайырында һүҙҙе бик ололаған, уны йәштәргә аманат итеп ҡалдырған.* Ә. Вахитов.

**3.** Берәй шартты үтәтеү, вәғәҙәне боҙоуға юл ҡалдырмау маҡсаты менән ҡаршы тарафтан алынған тотҡон йәки ҡиммәтле нәмә. *[Ҡараһаҡал] аманат булып ятҡан күптәрҙе казаматтан ҡотҡарып, кире Уралға ҡайтҡан.* «Ҡараһаҡал». *[Ерәнсә:] Ышанмаһаң, бына аманатына мал тулы ҙур тоғомдо алып торорһоң.* «Ерәнсә сәсән көләмәстәре».

**АМАНЛАШЫУ** *ҡ.* **1.** Иҫәнлек-һаулыҡ һорашыу; иҫәнләшеү. *[Сураґол] сәләм алышып, аманлашҡандың һуңында, бик ауыр ғына ҡуҙғалып урындыҡ ситенә ултырҙы.* Т. Хәйбуллин.

**2.** Хушлашыу, һаубуллашыу. *Ил-йорт менән хушлашып, аманлашып, Тамъян батыр Мәсем ханға китеп ҡалды.* «Бабсаҡ менән Күсәк».

**АМАН-ҺАУЛЫҠ: аман-һаулыҡ һорашыу** хәл белешеү.

**АМАРИ́ЛЛИС** [*рус.* ⟨ *гр.*] *и.* Бер үҫәклеләр ғаиләһенә ҡараған матур сәскәле декоратив үҫемлек. *Амариллис сәскәһе.*

**АМБА́Р** *и.* Иген, он һәм башҡа нәмәләр һаҡлай торған бина; келәт. *Исламовтың амбарҙарынан өс мең бот иген ревком тарафынан конфисковать ителә.* Ғ. Хәйри.

**АМБИ́ЦИЯ** [*рус.* ⟨ *лат.*] *и. кит.* Үтә көслө ғорурлыҡ, минлек тойғоһо.

**АМБРАЗУ́РА** [*рус.* ⟨ *фр.*] *и.* Ышыҡланып атыу өсөн яһалған төрлө ҡоролмаларҙағы тишек. *Дзот амбразураһы.* ■ *Ликунов амбразураның тар ғына төнлөгөнән бинокле менән ҡарай.* Ж. Кейекбаев.

**АМБУЛАТО́РИЯ** [*рус.* ⟨ *лат.*] *и.* Килеп күренгән йәки өйҙә ауырып ятҡан кешеләргә ярҙам күрһәтә торған медицина учреждениеһы.

**АМЁБА** [*рус.* ⟨ *гр.*] *и.* Хәрәкәт иткәндә тән рәүешен үҙгәртә ала торған бер күҙәнәкле ябай йән эйәһе.

**АМЕРИКАЛЫ** *и.* Америка Ҡушма Штаттарының төп халҡын тәшкил иткән милләт һәм шул милләттең бер кешеһе.

**АМЕТИ́СТ** [*рус.* ⟨ *гр.*] *и.* Ҡыҙыл күк төҫтәге аҫыл таш (кварцтың бер төрө).

**АМИН** [*гәр.*] *киҫ. иҫк. дини* Доғанан, намаҙҙан һуң әйтеп ҡуйыла торған һүҙ. *Муллалар: «Амин!» — тип ҡул күтәрҙе.* Т. Хәйбуллин./Шулай булһын, әйткәнең килһен, тигән мәғәнәлә теләк белдергәндә әйтелә. *[Мулла:] һуғышта вафат булғандар шәһит китеп, теге донъяла һис бер сөалһыҙ ожмахҡа инеп, мәңге рәхәт йәшәгәй, илаһи амин!* Һ. Дәүләтшина.

♦ **Амин тотоу** *иҫк.* ашағандан һуң ҡул күтәреп доға ҡылыу; хуш итеү. *Бөтәһе лә сәй эсеп түйҙы. Амин тоттолар.* З. Биишева. **Фәрештәнең амин тигән сағына (***йәки* **сәғәтенә) тура килһен** ниҙер тормошҡа ашҡанда йәки тормошҡа ашыуын теләгәндә әйтелә. *[Һылыу:] Ишдәүләт суфыйҙы сәйгә саҡырып, бөгөнгө төшөмдө юратып алайымсы әле. Ул бик дөрөҫ юрай торғайны, фәрештәнең амин тигәненә тура килһен.* Т. Йәнәби.

**АММИА́К** *и.* Азот менән водородтан торған төҫһөҙ һаҫыҡ газ. *Аммиак селитраһы. Аммиак һыуы.*

**АММО́НИЙ** [*рус.* ⟨ *гр.*] *и.* **1.** *хим.* Азот һәм водородтан торған атомдар төркөмө (төрлө тоҙҙар эсенә инә).

**2.** Сүпрә урынында ҡулланылған онтаҡ.

**АМНИ́СТИЯ** [*рус.* ⟨ *гр.*] *и.* Суд хөкөм иткән кешеләрҙең хөкүмәт ҡарары менән азат ителеүе. *Амнистия алыу. Амнистия биреү. Амнистияға эләгеү.*

**АМОРТИЗА́ТОР** [*рус.*] *и.* Төрлө машина һәм аппараттарҙа бәрелеү, һуғылыу, һелкенеүҙе йомшарта торған махсус ҡулайлама. *Пружиналы амортизатор. Амортизатор ҡуйыу.*

**АМОРТИЗА́ЦИЯ** [*рус.* ⟨ *лат.*] *и.* **1.** Йорт, машина һ. б. нәмәне файҙаланған өсөн әҙләп түләтеү аша дөйөм хаҡтың ҡапланышы. *Амортиза-*

*ция мөҙҙәте. Амортизация хакы. Амортизация сығымы.*

**2.** Махсус ҡорамал ярҙамында бәрелеү, һуғылыу көсөнөң йомшарыуы. *Амортизация яһау.*

**АМОРФ** [*рус.* аморфный ⟨*гр.*⟩ *с.* **1.** Кристаллашмай торған; кристаллашмаған. *Аморф матдә.*

**2.** *лингв.* Грамматик формалары булмаған, һүҙҙәр ялғанышы менән генә төҙөлгән. *Аморф телдәр.*

**АМПАЙЫУ** *к. диал.* Һемәйеү.

**АМПЕ́Р** [*рус.* ⟨*фр.*⟩ *и.* Электр тогының көсөн үлсәү берәмеге.

**АМПЕРМЕ́ТР** [*рус.*] *и.* Электр тогының көсөн үлсәй торған прибор.

**АМПЛИТУ́ДА** [*рус.* ⟨*лат.*⟩ *и. физ.* Тирбәлгән есемдең тигеҙлек нөктәһенән иң ныҡ тайпылған хәле; тирбәлеш киңлеге. *Сәғәт теленең амплитудаһы.*

**АМПЛУА́** [*рус.* ⟨*фр.*⟩ *и.* Артистың тәбиғәтенә тап килгән ролдәр төрө. *Комик амплуаһы.*

**А́МПУЛА** [*рус.* ⟨*лат.*⟩ *и.* Ауыҙы бөтәштерелеп, һауа үтмәҫлек итеп эшләнгән бәләкәй генә дарыу шешәһе.

**АМПУТА́ЦИЯ** [*рус.* ⟨*лат.*⟩ *и.* Тән өлөшөнөң (ғәҙәттә аяҡ-ҡулдың) хирургик юл менән ҡырҡып алыныуы. *Ампутация яһау.*

**АМУНИ́ЦИЯ** [*рус.* ⟨*фр.*⟩ *и. иҫк.* Хәрби хеҙмәттәге кешенең бөтә булған кәрәк-ярағы (кейем менән ҡоралдан башҡа) йәки хәрби аттың ҡамытыңғырсаҡ, эйәр-өпсөнө.

**АМФИ́БИЯ** [*рус.* ⟨*гр.*⟩ *и.* **1.** *зоол.* Умыртҡалы ер-һыу хайуаны.

**2.** *бот.* Ер-һыу үҫемлеге.

**3.** Ергә лә, һыуға ла ултыра алған самолёт; ерҙә лә, һыуҙа ла йөрөй алған танк, автомобиль һ. б.

**АМФИТЕА́ТР** [*рус.* ⟨*гр.*⟩ *и.* **1.** Боронғо Греция һәм Римда: түңәрәкләндереп, баҫҡыс-баҫҡыс итеп эшләнгән асыҡ тамаша бинаһы.

**2.** Тамаша залының партеры артындағы баҫҡыс-баҫҡыс булып күтәрелгән урындар.

**АМЫРЫҠ** *с. диал.* Һумалтыр.

**АНА** [1] *күрһ. а.* **1.** Нимәгәлер тоҫҡап күрһәткәндә әйтелә. *[Индрил:] Ана һул яҡта, бик алыҫ түгел ауыл күренә!* Д. Юлтый./Нимәгәлер айырым баҫым менән тоҫҡағанда әйтелә. *Ана Сәхипкирәйҙәр өс йәнгә бер йомала дисәтинә ярым урған, ти.* Һ. Дәүләтшина. *Әйттем бит ана, ул минең яҡлы.* С. Агиш.— *Һиңә ат нимәгә, ана башмаҡ менән кит* (Әкиәттән).

**2.** Нимәгәлер кешенең иғтибарын йүнәлтеү өсөн әйтелә. *[Сәғиҙә:] Ана эт өргән тауыш ишетелә.* М. Тажи. *Яҙҙар килә ана, тамсы тама, иҫкә төшә үткән ғүмерем.* Ш. Бабич. **Ана бит [ана]** нимәгәлер баҫым яһап, кешенең иғтибарын йүнәлткәндә әйтелә. *[Үмәр:] Ана бит ни саҡлы расход төктем.* Һ. Дәүләтшина.

**3.** «Шул», «теге», «шулай» кеүек алмаштар менән килеп, уларҙың мәғәнәһен көсәйтә. *Ер, урман, һыу бирә икән, башҡортҡа ана шул еткән.* Салауат. *Ҡуҙыйкүрпәстең ана шулай яманаты таралып китте, ти.* «Ҡуҙыйкүрпәс менән Маянһылыу».

♦ **Ана бара юлың** китәм тигән кешегә асыу итеп, кит, тигән мәғәнәлә әйтелә. *[Ғәзим:] Мин артабан былай йәшәй алмайым. [Ғәзизә:] Ана бара юлың!* Я. Вәлиев. **Ана.., бына..** ниндәйҙер тиҙ ваҡиға, үҙгәреш көткәндә әйтелә. *[Ҡобора] ирен ана яҡшырыр, бына яҡшырыр тип өмөт итте.* Б. Викбай. **Ана тора** теләһәң ни эшлә; үҙ иркеңдә тигән мәғәнәлә әйтелә. *[Ғәбиҙә:] Хөсәйен ҡәйнеш, көсләп күсергән кеше юҡ, теләйһең икән, күсәһең, теләмәйһең икән, тағы ла — ана тора.* Һ. Дәүләтшина. **Бар ана** берәй эште кемдеңдер теләгенә ҡаршы тәүәккәлләргә кәңәш иткәндә, әйҙә, шунан, тигән мәғәнәлә әйтелә. *Күтәрелеп сыҡ та кит. Бар ана, ул йөрөһөн артыңдан.*

● *Ана түй, бына түй, ике ҡуйҙың береһен һуй.* Мәҡәл.

**АНА** [2] *и. ҡар.* **әсә.** *Һалдат хәсрәтен күргәнсә, тыумаһамсы ананан* (Халыҡ йырынан).

● *Ана күңеле балала, бала күңеле далала.* Мәҡәл.

**АНА** [3]**: ау анаһы** ауҙың эре күҙәнәкле итеп бәйләнгән тышҡы ҡаты. *Ау анаһы йыуан ептән бәйләнә.*

**АНАБИО́З** [*рус.* ⟨*гр.*⟩ *и. биол.* Ҡайһы бер үҫемлек һәм ябай йән эйәләренең уңайһыҙ шарттарға (һыуыҡлыҡ, һыуһыҙлыҡ һ. б.) яраҡлашып, тереклек итеүҙән күпмелер туҡтап тороу һәләте.

**АНАКО́НДА** [*рус.* ⟨*исп.*⟩ *и.* Көньяҡ Америкалағы иң эре быуар йылан.

**АНА́ЛИЗ** [*рус.* ⟨*гр.*⟩ *и.* **1.** Бөтөндө өлөштәргә тарҡатып өйрәнеүгә нигеҙләнгән ғилми ысул; *киреһе* синтез. *Анализ яһау.*/Берәй эш-хәлдең тикшерелеше. *Анализ биреү. Эштең торошона төплө анализ биреү.*

**2.** Матдә составының, матдә үҙенсәлектәренең билдәләнеше. *Ҡан анализы. Химик анализ. Анализ яһау.*

**АНАЛИЗЛАНЫУ** *к. төш. ҡар.* **анализлау.**

**АНАЛИЗЛАУ** *к.* Анализ (1 мәғ.) үткәреү, анализ яһау. *Әҫәрҙе анализлау.* ■ *Яҙыусы — беренсе сиратта аҡыл эйәһе. Ул тормошто анализлай белергә, хәл-ваҡиғаларҙы .. баһалай белергә тейеш.* Ә. Вахитов.

**АНАЛИ́ТИК** *и.* Тикшеренеү эшендә анализ юлы менән барыусы, яҡшы анализлай белеүсе.

**АНАЛИТИ́К** *с.* Анализға нигеҙләнгән. *Аналитик метод.*

♦ **Аналитик геометрия** математиканың алгебра һәм анализ методтары ярҙамында геометрик тикшеренеүҙәр үткәрә торған бүлеге. **Аналитик телдәр** грамматик мөнәсәбәт йәки мәғәнәне тейешле аффикстар ярҙамында түгел, һүҙ тәртибе, ярҙамсы һүҙҙәр һәм интонация менән белдерә торған телдәр.

**АНАЛО́ГИЯ** [*рус.* ⟨*гр.*⟩ *и. ҡар.* **оҡшашлыҡ.**

**АНАЛЫ: аналы** ау өс ҡат ау.

**АНАЛЫҠ** *и. анат.* Ҡатын-ҡыҙҙың бала яралғыһы үҫә торған эске енси ағзаһы.

**АНАН** *а. һөйл.* Унан.

**АНАНА́С** [*рус.* ⟨*исп.*⟩ *и.* **1.** Ҡалын ҡыяҡ япраҡлы, тыштан ҡабырсаҡланып торған эре, һутлы емешле йылы яҡ үҫемлеге.

**2.** Шул үҫемлектең емеше.

**АНАР** [*фарс.*] *и.* **1.** Ҡып-ҡыҙыл сәскәле, ҡаты ҡабыҡ эсендә уҡмашып торған һутлы ҡыҙыл емешле йылы яҡ ағасы; гранат.

2. Шул ағастың емеше. *Анар һуты.*

**АНАРХИЗМ** [*рус.* ⟨ *гр.*] *и.* Һәр төрлө дәүләт власына, шул иҫәптән пролетариат диктатураһына ҡаршы сығып, эшселәр синыфының ойошҡан политик көрәшен инҡар итеп, анархияға саҡырған антимарксистик ваҡ буржуаз ағым.

**АНАРХИК** *с.* Анархизмға һәм анархияға мөнәсәбәтле.

**АНАРХИСТ** [*рус.*] *и.* Анархизм яҡлы кеше. *Маркс анархистарҙың эшселәр синыфының революцион мөмкинлектәренә ышанмауҙарын гәйепләне.* «Совет Башҡортостаны», 1968, 10 апрель.

**АНАРХИСТИК** *с.* **1.** Анархистарға мөнәсәбәтле. *Анархистик ағым. Анархистик ойошма.*

**2.** Анархистарға хас. *Анархистик ҡараш.*

**АНАРХИЯ** [*рус.* ⟨ *гр.*] *и.* **1.** Йәмғиәттең власһыҙлыҡ, законһыҙлыҡ хөкөм һөргән хәле.

**2.** *кусм. һөйл.* Башбаштаҡлыҡ, тәртипһеҙлек.

**АНАТОМ** *и.* Анатомия буйынса белгес.

**АНАТОМИК** *с.* Анатомияға мөнәсәбәтле. *Анатомик атлас. Анатомик экспонат.*

**АНАТОМИЯ** [*рус.* ⟨ *гр.*] *и.* Организмдың төҙөлөшөн өйрәнә торған фән. *Кеше анатомияһы. Үҫемлектәр анатомияһы. Хайуандар анатомияһы.*

**АНАУ** *күрһ. а.* **1.** Күҙ алдында торған нәмәгә тоҫҡап, нисәр һөйләгәндә әйтелә. *[Әбйәлил:] Олатайым анау тал араһында ята, ти* (Әкиәттән). /*и. мәғ.* Әйтеп үтелгән йәки былай билдәле булған кешене атағанда ҡулланыла. *Анау килмәне лә куйҙы бит.*

**2.** Билдәле булған эш-хәл, кеше йәки нәмә тураһында һүҙ барғанда, шуға иғтибарҙы йүнәлдереү өсөн әйтелә. *Анау колхоз председателе Сакай Солтанов моңһоҙ кеше булып сыкты.* Б. Бикбай.

**3.** Ваҡыт төшөнсәһен белдергән һүҙҙәр менән килеп, үткән бер ваҡытҡа тоҫҡай. *Анау көн. Анау йылды.* ■ *[Миңлебай:] Анау сакта ла сепаратор алайыҡ тигәс,.. арҡыры төштөң.* Т. Йәнәби.

**АНАУЛАЙ** *р.* **1.** Анау яҡҡа. *Быҙау яңы ғына анаулай китте.*

**2.** Эш-хәлдең билдәле бер рәүешенә тоҫҡағанда әйтелә; ана шулай. *[Сәғиҙә:] Яланбикәбеҙ анаулай булып үлеп калды.* Һ. Дәүләтшина.

**АНАУЛАЙТЫП** *р.* Билдәле бер эш-хәлгә тоҫҡағанда әйтелә. *[Сәғиҙә:] Яланбикәһе анаулайтып йәтим калып ултыра.* Һ. Дәүләтшина.

**АНАУЫ** *а. ҡар.* **анау.**

**АНАУЫНДА** *р.* **1.** Анау ерҙә. *Салғы анауында, тал төбөндә тора.*

**2.** Анау ергә. *Туныңды анауында әл.*

**АНАФОРА** [*рус.* ⟨ *гр.*] *и. әҙ.* Бер үк өн, һүҙ, һөйләмде эргәләш торған бер нисә һүҙҙә, һөйләмдә йәки юл башында ҡабатлауҙан ғибәрәт булған стилистик алым (мәҫ *Хикәйә бар .. улар йырҙа йөрөй, хикәйә бар ауыр көйҙәрҙә.* Ғ. Сәләм).

**АНАХРОНИЗМ** [*рус.* ⟨ *гр.*] *и.* **1.** Бер дәүер ваҡиғаһының хаталыҡ менән икенсе дәүергә күсерелеше.

**2.** Иҫкергән күренеш, фекер һ. б.

**АНАХРОНИК** *с.* Анахронизм булған, иҫкергән.

**АНГАР** [*рус.* ⟨ *фр.*] *и.* Самолёттар, вертолёттар һ. б. тора, ремонтлана торған махсус ҡоролма.

**АНГИДРИД** [*рус.* ⟨ *гр.*] *и. хим.* Һыу менән ҡушылғанда кислота хасил итә торған әсемә. *Күкөрт ангидриды.*

**АНГИДРИТ** [*рус.* ⟨ *гр.*] *и.* Һыу менән ҡушылғанда гипс барлыҡҡа килтерә торған аҡһыл йәки зәңгәрһыу минерал. *Ҡайһы бер убалар тотош тиерлек гипс йәки ангидриттан тора.* М. Хисмәтов.

**АНГИНА** [*рус.* ⟨ *лат.*] *и.* Тамаҡ шешеүе. *Ангина менән ауырыу. Ангинанан дауаланыу.*

**АНДА** *а. һөйл.* Унда.

**АНДАНТЕ** *муз.* **1.** *р.* Әкрен, талғын (музыкаль әҫәрҙең башҡарылыш темпына ҡарата).

**2.** *и.* Талғын башҡарылған музыкаль әҫәр йәки уның өлөшө.

**АНДА-ҺАНДА** *р. һөйл.* Унда-һанда. *Анда-һанда ваҡ ҡына ямғырҙарға төрөнөп, борҡой ҡар.* Ш. Бабич.

**АНДЫҘ** *и.* Дымлы ерҙә үҫә торған эре, киң япраҡлы, һары сәскәле бейек үлән. *Андыҙ тамыры.*

● *Андыҙ бар ерҙә ат үлмәҫ.* Мәҡәл.

**АНЕКДОТ** [*рус.* ⟨ *гр.*] *и. ҡар.* **көләмәс.**

**АНЕКДОТИК** *с. ҡар.* **көлкө.** *Анекдотик хәл.*

**АНЕМИЯ** [*рус.* ⟨ *гр.*] *и. мед.* Ҡыҙыл ҡан бөртөксәләренең ныҡ кәмеүенән барлыҡҡа килгән ауырыу; ҡан аҙлығы.

**АНЕМОМЕТР** [*рус.* ⟨ *гр.*] *и.* Елдең тиҙлеген үлсәй торған прибор.

**АНЕРОИД** [*рус.* ⟨ *гр.*] *и.* Барометрҙың бер төрө.

**АНИЛИН** [*рус.* ⟨ *гәр.*] *и.* Бușяуҙар, шартлатҡыс матдәләр яһау өсөн ҡулланыла торған төҫһөҙ, ағыулы, май һымаҡ органик шыйыҡлыҡ.

**АНИҺӘ** *киҫ. һөйл.* Бер эштең икенсе бер эштән яҡшыраҡ булыуына баҫым яһағанда әйтелә. *Буш менән ваҡыт уҙғарып йөрөгәнсә, аниһә картуф ҡаҙыш.*

**АНКЕТА** [*рус.* ⟨ *фр.*] *и.* Кәрәкле мәғлүмәт алыу өсөн төҙөлгән һораулыҡ ҡағыҙы. *Анкета тултырыу. Анкета мәғлүмәттәре.*

**АННЕКСИЯ** [*рус.* ⟨ *лат.*] *и.* Берәй илдең йәки уның өлөшөнөң баҫып алыныуы йәиһә икенсе бер илгә көсләп ҡушылыуы; баҫҡынсылыҡ. *Аннексия политикаһы. Аннексия яһау.*

**АННЕКСИЯЛАНЫУ** *к. төш. ҡар.* **аннексиялау.**

**АННЕКСИЯЛАУ** *к.* Аннексия яһау.

**АННОТАЦИЯ** [*рус.* ⟨ *лат.*] *и.* Китап, мәҡәлә йәки башҡа нәмәнең ҡыҫҡаса йөкмәткеһен асып биргән яҙма. *Аннотация биреү. Аннотация яҙыу.*

**АНОД** [*рус.* ⟨ *гр.*] *и.* Ыңғай зарядлы электрод; *киреһе* катод.

**АНОМАЛИЯ** [*рус.* ⟨ *гр.*] *и.* Дөйөм ҡағиҙәнән ситкә сыҡҡан тайпылыш. *Физик үҫештәге аномалия.*

◆ **Магнит аномалияһы** *ҡар.* **магнит.**

**АНОМАЛЬ** [*рус.* аномальный] *с.* Дөйөм ҡағиҙәгә тура килмәгән. *Аномаль хәл.*

**АНОНИ́М** [1] [*рус.* ⟨ *гр.*] *и.* Авторы күрһәтелмәгән әҫәр, хат.

**АНОНИ́М** [2] [*рус.* анонимный] *с.* Авторы күрһәтелмәгән; исемһеҙ. *Аноним хат.*

**АНОНИ́МКА** [*рус.*] *и. һөйл.* Исемһеҙ, кем яҙғаны билдәһеҙ хат. *Анонимка алыу. Анонимканы тикшереү.*

**АНОНИМСЫ** *и.* Үҙ исемен ҡуймай хат йәки башҡа нәмә яҙған кеше.

**АНО́НС** [*рус.* ⟨ *фр.*] *и.* Буласаҡ гастроль, спектакль, концерт һ. б. нәмә тураһында яһалған белдереү.

**АНӨСӨН** *ҡыҫк. ф. һөйл.* Аның өсөн.— *Һин китергә булдыңмы ни? — Анөсөн.*

**АНСА** *р. диал.* Ул хәтле, ул тиклем. *Анса үҫкән ашлыҡ түгел.*

**АНСАЙЫН** *с. диал.* **1.** Бик уҫал, сая.

**2.** Көсөргәнешле, хәтәр. *Эштәр ансайын булып китте.*

**3.** *кусм.* Нык дәрәжәлә. *Ансайын күп булмаҫ.*

● *Күршең ансайын булһа, тыныслыҡ күрмәҫһең.* Әйтем.

**АНСА́МБЛЬ** [*рус.* ⟨ *фр.*] *и.* **1.** Музыкаль, драматик һ. б. әҫәрҙәрҙең башҡарылышындағы төҙөклөк, килешлек, гармониялылыҡ.

**2.** Бер ижади коллектив булып сығыш яһаған артистар төркөмө. *Йыр һәм бейеү ансамбле. Ҡурайсылар ансамбле.*

**3.** Төҙөк, килешле бер бәйләнешкә килгән берҙәмлек. *Архитектура ансамбле.*

**АНТ** *и.* Ҡәтғи, тантаналы һүҙ менән нығытылған вәғәҙә. *Ант биреү. Антты боҙоу. Антты тотоу.* ■ *Йәш сағым, алтын сағым, ялҡын сағым булһын фиҙа халҡым алдында минең биргән таҙа антым өсөн.* Ш. Бабич. *Башҡорттар Беренсе Май көндө Ватан алдында ғәскәри ант бирҙе.* Ә. Ихсан. /Шул вәғәҙәне йәки хәбәрҙе нығытыу өсөн әйтелә торған тантаналы һүҙ. *[Хәйретдин:] Валлаһи-биллаһи, ант, алтындың ҡайҙан табылғанын белмәйем.* Я. Хамматов. **Ант башҡа етеү** боҙолған анттың ҡоһорон күреү. *Дошман башын юймайса, инде килмәм ҡашыңа. Үс алмаһам дошмандан, антым етһен башыма* (Халыҡ йырынан).

□ **Ант итеү** ант һүҙе әйтеү. *Яға тотоп ант итеү.* ■ *Фашистың аяғы баҫмаҫ, ант итәмен мин, ерем.* С. Кулибай.

**АНТАГОНИ́ЗМ** [*рус.* ⟨ *гр.*] *и.* Килешә алмаҫлыҡ, ҡаршылыҡ. *Синфи антагонизм.*

**АНТАГОНИ́СТ** [*рус.*] *и.* Килешә алмаҫ дошман; ҡара дошман.

**АНТАГОНИСТИК** *с.* Килешә алмаҫлыҡ ҡаршылыҡлы. *Буржуаз йәмғиәттең антагонистик синыфтары.*

**АНТАРКТИК** *с.* Антарктикаға мөнәсәбәтле. *Антарктик экспедиция.*

**АНТА́РКТИКА** [*рус.* ⟨ *гр.*] (*баш хәреф менән*) *и.* Ер шарының көньяҡ полюсы тирәһендәге өлкә.

**АНТЕ́ННА** [*рус.* ⟨ *лат.*] *и.* Электромагнит тулҡындарын тотоу һәм таратыу өсөн хеҙмәт иткән ҡулайлама. *Радио антеннаһы. Телевизор антеннаһы.*

**АНТИБИО́ТИК** [*рус.* ⟨ *гр.*] *и.* Ауырыу тыуҙырыусы микроорганизмдарҙы үлтерергә һәләтле булған биологик сығышлы матдә.

**АНТИДЕМОКРАТИК** *с.* Демократияға, халыҡ мәнфәғәтенә ҡаршы йүнәлешле. *Антидемократик империалистик политика.*

**АНТИИМПЕРИАЛИСТИК** *с.* Империализмға ҡаршы йүнәлешле. *Антиимпериалистик хәрәкәт.*

**АНТИК** *с.* Боронғо Грек йәки Римдың сәнғәтенә, культураһына һ. б. мөнәсәбәтле. *Антик трагедия. Антик мифология.*

**АНТИКВА́Р** [1] [*рус.* ⟨ *лат.*] *и.* **1.** Боронғо сәнғәт әҫәрҙәрен, иҫке ҡиммәтле нәмә һәм китаптарҙы белгән, йыйған кеше.

**2.** Шул нәмәләрҙе һатыусы.

**АНТИКВАР** [2] [*рус.* антикварный] *с.* **1.** Боронғо һәм ҡиммәтле. *Антиквар китап. Антиквар нәмәләр.*

**2.** Шул нәмәләрҙе һата торған. *Антиквар магазин.*

**АНТИКОЛОНИАЛЬ** [*рус.* антиколониальный] *с.* Колониализмға ҡаршы йүнәлешле. *Антиколониаль көрәш.*

**АНТИКОММУНИ́ЗМ** *и.* Коммунистик теорияға һәм практикаға ҡаршы булған идеология һәм политика.

**АНТИКОММУНИСТИК** *с.* Антикоммунизмға мөнәсәбәтле.

**АНТИЛО́ПА** [*рус.* ⟨ *лат.*] *и. ҡар.* **йәйрән.**

**АНТИМАРКСИСТИК** *с.* Марксизмға ҡаршы йүнәлешле. *Антимарксистик теория.*

**АНТИМАТЕРИАЛИСТИК** *с.* Материализмға ҡаршы йүнәлешле. *Антиматериалистик теория.*

**АНТИМИЛИТАРИ́ЗМ** [*рус.*] *и.* Империалистик һуғыштарға һәм милитаризм политикаһына ҡаршы йүнәлтелгән халыҡ-ара хәрәкәт.

**АНТИМИЛИТАРИСТИК** *с.* Антимилитаризмға мөнәсәбәтле.

**АНТИПА́ТИЯ** [*рус.* ⟨ *гр.*] *и.* Яратмау, күрә алмау тойғоһо; *киреһе* симпатия.

**АНТИПО́Д** [*рус.* ⟨ *гр.*] *и.* **1.** Ер шарының ҡапма-ҡаршы ике яғында йәшәгән кешеләр.

**2.** Ҡараш-фекере, тәбиғәте һ. б. менән кемгәлер ҡапма-ҡаршы торған кеше.

**АНТИСЕМИ́Т** [*рус.* ⟨ *фр.*] *и.* Антисемитизм яҡлы кеше.

**АНТИСЕМИТИ́ЗМ** [*рус.* ⟨ *фр.*] *и.* Буржуазияның синфи мәнфәғәтендә йәһүдтәргә ҡарата юрамал дошманлыҡ уятыуҙан ғибәрәт булған реакцион милли ҡаршылыҡтың бер төрө.

**АНТИСЕМИТИК** *с.* Антисемитҡа, антисемитизмға мөнәсәбәтле. *Антисемитик ҡараш.*

**АНТИТЕ́ЗА** [*рус.* ⟨*гр.*] *и.* **1.** Ҡапма-ҡаршы төшөнсә; ҡаршылыҡ.

**2.** *әҙ.* Ҡапма-ҡаршы төшөнсәләрҙе һәм образдарҙы сағыштырыуға ҡоролған әҙәби-стилистик алым.

**АНТИФАШИ́СТ** [*рус.* ⟨ *фр.*] *и.* Фашизмға ҡаршы көрәштә ҡатнашҡан кеше.

**АНТИФАШИСТИК** *с.* Фашизмға ҡаршы йүнәлешле. *Антифашистик көрәш.*

**АНТИЦИКЛО́Н** *и. метеор.* Атмосфераның циклондар араһындағы һауа баҫымы тотороҡло юғары торған өлкәһе.

**АНТОЛО́ГИЯ** [*рус.* ⟨ *гр.*] *и. әҙ.* Төрлө автор әҫәрҙәренән (ғәҙәттә шиғырҙарҙан) һайлап төҙөлгән йыйынтык. *Башҡорт поэзияһының антологияһы.*

**АНТО́НИМ** [*рус.* ⟨ *гр.*] *и.* Икенсе бер һүҙгә ҡапма-ҡаршы мәғәнәле һүҙ.

**АНТО́НОВКА** [*рус.*] *и.* **1.** Киң таралған ҡышҡы алма ағасы.

**2.** Шул ағастың алмаһы. *Антоновка алмаһы.*

**АНТРА́КТ** [*рус.* ⟨ *фр.*] *и.* **1.** Сәхнә тамашаларының шаршау йәки бүлектәре араһындағы тәнәфес. *Антракт ваҡыты.*

**2.** Спектаклдең шаршауҙары араһында башҡарыла торған ҙур булмаған музыкаль әҫәр.

**АНТРАЦИ́Т** [*рус.* ⟨ *гр.*] *и.* Иң яҡшы ҡаты ташкүмер (йылтыр ҡара төҫтә). *Тектоник ҡыҫымдар аҫтында балсыҡташ — сланецҡа, ҡомташ — кварцитҡа, эзбизташ — мәрмәргә, ташкүмер — антрацитҡа әүерелә.* Д. Бураҡаев.

**АНТРОПО́ЛОГ** [*рус.* ⟨ *фр.*] *и.* Антропология буйынса эшләгән белгес.

**АНТРОПОЛОГИК** *с.* Антропологияға мөнәсәбәтле. *Антропологик эш. Антропологик мәғлүмәттәр.*

**АНТРОПОЛО́ГИЯ** [*рус.* ⟨ *гр.*] *и.* Кешенең килеп сығышын һәм үҫешен, кеше расаларының барлыҡҡа килешен, кешенең тән төҙөлөшө үҙгәрештәрен өйрәнә торған фән.

**АНТЫ-МАНТЫ: анты-манты, ер йотһон** *бал.* берәй һүҙҙе нығытып, ант иткәндә әйтелә.

**АНФА́С** [*рус.* ⟨ *фр.*] *р.* Алдан, йөҙ менән. *Карточкаға анфас төшөрөү.*

**АНҺАТ** *с.* Артыҡ көс, ҙур көсөргәнеш талап итмәгән; еңел; *киреһе* ҡыйын. *Анһат мәсьәлә. Анһат эш. Анһат булыу. Анһат итеү. // Анһат еңеү. Анһат күреү. Анһат эшләү.* ■ *Анһат кәсеп эҙләп йөрөгән Шәғәли [был ҡатынды] күреп ҡала ла, ҡырҡ төргә кереп, башын әйләндерә.* Б. Бикбай. *[Белә:] Юҡ инде, ағай, минән улай анһат ҡотола алмаҫһың* (Әкиәттән).

♦ **Анһатҡа һалышыу** еңел юлға баҫыу, еңелде ҡарау.

● *Тауға менеүе ҡыйын, төшөүе анһат.* Әйтем.

**АНҺАТЛАНДЫРЫУ** *ҡ.* Анһатҡа, еңелгә әйләндереү, анһат итеү.

**АНҺАТЛАНЫУ** *ҡ.* Анһатҡа, еңелгә әйләнеү.

**АНҺЫҒЫУ** (анһыҡ*ғ*) *ҡ.* **1.** Бик нык һыуһау; сарсау. *Анһығып килеп һыуыҡ һыу эстем.*

**2.** *күсм.* Бик нык теләү, ашҡынып теләү; алғыһау. *Тиҙерәк яуға ташланып, дошманды илдән һөрөп, тыуған ерҙәргә тантана менән ҡайтырға анһығалар [егеттәр].* С. Әлибаев.

**АНҺЫҘ** *а. һөйл.* Унһыҙ.

**АНҺЫКТЫРЫУ** *ҡ.* **1.** Бик нык һыуһатыу; сарсатыу. *Тоҙло аш анһыктырҙы.*

**2.** *күсм.* Көслө теләк уятыу; алғыһатыу. *Илдәр, ирҙәр күкрәгенә һалып ҡыуанысын, моңон, хәсрәтен, анһыктырып һаман киләсәккә, ваҡыт һынай көстәр нисбәтен.* Х. Назаров.

**АНҺЫЛЫУ** *ҡ. диал.* Анһығыу.

**АНҺЫУ** *ҡ. диал.* Анһығыу.

**АНШЛА́Г** [*рус.* ⟨ *нем.*] *и.* Театрға, киноға билет һатылып бөткәнен белдергән иғлан.

**АНЫҠ** [*ғәр.*] *с.* Асылы билдәле; асыҡ. *Аныҡ хәбәр. Аныҡ һүҙ. Аныҡ итеп яуап биреү. // Аныҡ әйтеү.* ■ *Бик аныҡ бел: ул. [Ишми ишан] монафиҡ, иң беренсе шайтанының.* Ш. Бабич. *Алтын запасы күпме икән [ен күрһәткән] аныҡ мәғлүмәттәр юҡ.* «Совет Башҡортостанының ун йылы», 1929.

**АНЫҠЛАНЫУ** *ҡ. төш. ҡар.* **аныҡлау.** *Аныҡланған мәсьәлә.*

**АНЫҠЛАНЫУСЫ** *и. грам.* Һөйләм йәки һүҙ бәйләнешендәге аныҡлаусы тарафынан асыҡлана, билдәләнә торған һүҙ.

**АНЫҠЛАТЫУ** *ҡ. йөкм. ҡар.* **аныҡлау.**

**АНЫҠЛАУ** *ҡ.* Ниҙең дә булһа асылын тикшереп билдәләү; асыҡлау. *Ҡашына арыҫландың килде батыр, үлгәнен аныҡлап белде батыр.* «Бабсаҡ менән Күсәк».

**АНЫҠЛАУСЫ** *и. грам.* Һөйләм һәм һүҙбәйләнешендәге берәй һүҙҙе асыҡлап килгән эйәрсен киҫәк. *Һүҙбәйләнешендә аныҡлаусы аныҡланыусының алдында тора.*

**АНЫҠЛЫҠ** *и.* Асыҡлыҡ, билдәлелек. *Фекер аныҡлығы.*

**АҢ** [1] *и.* **1.** Үҙ-үҙеңде, тирә-йүнде тойоу, ҡабул итеү һәлте; иҫ. *Аңды юғалтыу.* ■ *Күҙ алдарым тона, ләкин донъя гүзәл һәм йәл ине аңымда.* С. Кулибай./Фекер итеү һәләте. *Аң — юғары ойошҡан материяның тышҡы донъяны идеаль образдарҙа сағылдырыу һәләте.*

**2.** Кешенең ысынбарлыҡты төшөнөү, белеү, фекер итеү һәләте. *Аң менән эш итеү.* ■ *Уҡылған китаптарҙы һөйләтеү ҙә телмәрҙе үҫтереү һәм балаларҙың аңын киңәйтеү өсөн билдәле әһәмиәткә эйә.* «Башҡортостан уҡытыусыһы», 1965, № 1. **Аңға килеү** тирә-йүнде тойорлоҡ, ҡабул итерлек хәлгә ҡайтыу. *Ҡаты йоҡонан уянған кеүек ҡапыл уяндым, аңыма килдем.* Д. Юлтый. **Аң инеү** тормош, хәлдең яйына, серҙәренә төшөнөү. *Хәҙер уның [Тимеркәйҙең] башына аң ингән инде. Уның эше егеттәр өйләнә, донъя рәхәтен күрә.* Д. Юлтый. **Ҡара аң** үҙенән-үҙе барлыҡҡа килгән, белем менән ағартылмаған аҡыл.

**3.** Кешеләр тарафынан йәмғиәт тормошон аңлап төшөнөү. *Политик аң. Аң уяныу.*

♦ **Аң итеү** уйлау.

● *Бармағыңа аң килһә, һөнәреңә дан килер.* Мәҡәл.

**АҢ** [2] *и. иҫк.* **1.** Ҡырағай йәнлек; кейек. *Был аңдан бар халыҡтың ҡото оскан, өйҙә-төҙҙә хайуанат ҡурҡып ҡаскан.* «Бабсаҡ менән Күсәк».

**2.** Ау, һунар. *Аңға барыу. Аңға йөрөү.*

**АҢ** [3] *с.* Һаҡ, уяу, һиҙгер. *Аң кеше.* **Аң булыу.** *// Аң йәшәү.* ■ *Бабсаҡ батыр аң торһон, Ҡарагөлөмбәт күҙ һала.* «Бабсаҡ менән Күсәк».

**АҢАНСА, аңанса булмай** *р. һөйл.* Уғаса.

**АҢ-БЕЛЕМ** *и. йыйн.* Уҡыу-яҙыу, фән-мәғрифәт буйынса дөйөм мәғлүмәт. *Аң-белем алыу. Аң-белем таратыу.* ■ *Аң-белем, фән беҙҙең ҡоралыбыҙ, коминтерн беҙҙең юлыбыҙ.* Ә. Мөслимова.

● *Аң-белем — мәңгелек ғилем.* Әйтем.

**АҢҒАНСА, аңғанса булмай** *р. һөйл.* Уғаса. *Аңғанса булмай сержант Полищук үҙенең ике һалдаты менән немец офицерын .. беҙҙең янға алып килеп еткерҙе.* С. Кулибай.

**АҢҒАРМАҪТАН** *р.* **1.** Һис тә көтмәгәндә, уйламағанда; абайламаҫтан. *Шул вакытта уларҙың алдына аңгармаҫтан бүреләр килеп сыккан.* М. Ғафури. *[Ямгыр], аңгармаҫтан килеп сыккан кеүек, капыл гына уҙып та китте. Ерҙең саңын да баҫманы.* З. Биишева.

**2.** Үҙең дә һиҙмәҫтән, яңылып; абайламаҫтан. *Арт капканан сыгып барышлай, [Гәрәй] аңгармаҫтан башын аркыры агаска бәреп алды.* Б. Бикбай.

**АҢҒАРТЫУ** *к.* Берәүҙең аңына еткереү; төшөндөрөү. *Артык баҙнатһыҙ булдым шул, йәшерҙем серҙәремде. Тик гармун теленда уга аңгарттым һүҙҙәремде.* А. Игебаев. *Егет бик кайгырып илай-илай өйөнә кайтып китә. Кайткас, катынына хәлде аңгартып бирә* (Әкиәттән). /Берәй эш-хәл тураһында иҫкәртеү, һиҙҙереү. *Ул сыйылдайҙар колакта бихисап ен шымсыһы: алгы көндән куркыныс, ҙур фажигә аңгарталар.* Ш. Бабич.

**АҢҒАРЫУ** *к.* Эш-хәлдең, ваҡиғаның асылын аңлау; төшөнөү. *Яралы минең һүҙҙәремде аңгарҙы булһа кәрәк, башын бора төштө.* Д. Юлтый. /Абайлап алыу, һиҙеү. *[Айрас] йоко аралаш ни булганын да аңгарманы.* Ш. Насыров.

● *Аңгармаган туңгәк сана ауҙарыр.* Мәҡәл.

**АНДЫМАҪТАН** *р. диал.* Аңғармаҫтан. *Андымаҫтан төнгө тын һауаны ярып китә мылтык тауышы.* Б. Ишемғол.

**АНДЫРЫУ** *к. диал.* Аңғартыу. *Таң Сулпаным, аңдыр, бөгөнгө таң ниндәй серҙәр менән нур ата?* Д. Юлтый.

**АҢДЫУ** *к.* **1.** Кемде йәки нимәнелер йәшерен генә күҙәтеү; һағалау. *Аңдып ултырыу.* ■ *Кис корон [клубтан] кайтып барганда, [Мөхлисәне] кулактар урманда аңдып тороп үлтергән.* М. Тажи. *Һәүбән алтын өйрәкте аңдып куп йөрөгән.* «Аҡбуҙат».

**2.** *диал.* Һаҡлау, ҡарап тороу. *Баланы кыркы тулганса аңдыйҙар (йола буйынса).*

● *Алыҫтагы дошмандан аңдып йөрөгән дуҫ яман.* Әйтем.

**АҢҠАЙТЫУ** *к.* Оҫта итеп алдау; һемәйтеү.— *Шунан,— тигән һунарсы был батырга,— Шурәлене нисек итеп аңкайтырга?* С. Кинйәкәй.

**АҢҠАЙЫУ** *к.* **1.** Ауыҙҙы асып, өҫкә ҡарап ҡатыу; аңшайыу. *[Балалар] бөтәһе лә аңкайып, кояшка сагылган күҙҙәрен кыҫып тирәк башына караны.* З. Биишева.

**2.** *кусм.* Аңһыҙ-тоңһоҙ булыу, шаҡ ҡатыу; аптырау. *[Катын:] Әллә мәрйә инде, бер ни төшөнмәй ... аңкайып калды гой.* М. Тажи.

**АҢҠАҠ** *и. диал. кар.* **аңҡау** [1].

**АҢҠАУ** [1] *и.* Ауыҙ эсенең өҫкө өлөшө; таңлай. *Алгы аңкау. Арткы аңкау. Йомшаҡ аңкау. Каты аңкау.*

◆ **Аңҡау гармонияһы** *лингв.* аңҡау һуҙынҡыларының әйтелештәге ярашыуы. **Аңҡау өндәре** *лингв.* аңҡау менән тел ҡатнашлығында яһалған өндәр.

**АҢҠАУ** [2] *с.* Әйткәнде аңламайыраҡ тора торған; аңра. *Гөлъямал, төнөн, тигән, һин булма аңкау, бул уяу.* Ш. Бабич.

● *Аңра халыкка аңкау мулла.* Әйтем.

**АҢҠЫ-МИҢКЕ** *р. диал.* Аңҡы-тиңке.

**АҢҠЫ-ТИҢКЕ** *р.* Иҫ аҡылды йыя алмаҫ хәлдә, аптыраған, ҡаңғырған хәлдә. *Аңкы-тиңке итеү.* // *Аңкы-тиңке булыу.* ■ *Өйөнән кыуылган Заһит, әйәһеҙ ат һымак, аңкы-тиңке булып Кәжән йылгаһы буйында оҙак йөрөнө.* Я. Хамматов. *Аңкы-тиңке бара бер кеше, газонга ла юлга карамай.* К. Кинйәбулатова.

**АҢҠЫТЫУ** *к.* Көслө итеп бөркөлдөрөү (еҫте). *Иртәнсәкке иҫкән һалкынса ел сейә, муйыл сәскәләрен һөйә, уларҙың тәмле еҫен аңкытып, морон эсен кытыклап үтә.* И. Көҫәпҡол.

**АҢҠЫУ** *к.* **1.** Көслө булып бөркөлөү (еҫкә ҡарата). *Мин еләк еҫе аңкып торган бесән өҫтөнә һуҙылып яттым.* С. Кулибай. *Көнсыгыштан төтөнлө ел иҫә, дары еҫе аңкый был елдән.* Ғ. Әмири.

**2.** *кусм.* Нығ һиҙелеү, асыҡ күренеү. *Меҫкен башкорт ауылын килеп күрһәм, аңкый хәсрәт, үлем, гурстан.* Ш. Бабич.

**АҢҠЫШ** *с. диал.* Аңра.

**АҢЛАЙЫШЛЫ** *с.* Аңлашылып торған, аңлауға еңел. *Аңлайышлы китап. Аңлайышлы һүҙ. Аңлайышлы итеп әйтеү.* // *Аңлайышлы һөйләү.* ■ *Дирижёрҙың кул хәрәкәттәре йырсыларга аныҡ, аңлайышлы булды.* «Ағиҙел», 1966, № 6.

**АҢЛАЙЫШҺЫҘ** *с.* Аңлап булмаҫлыҡ; аңлауға ауыр. *Аңлайышһыҙ телмәр. Аңлайышһыҙ итеп әйтеү.* // *Аңлайышһыҙ һөйләү.* ■ *[Шәүәли] аңлайышһыҙ нәмәләр мыгырлай.* Б. Бикбай.

**АҢЛАМАҪТАН** *р.* Ниәт итмәгән, уйламаған ерҙән; аңғармаҫтан. *Аңламаҫтан әйтеп һалыу.* ■ *Иң кәтги моментта аңламаҫтан үҙебеҙҙекеләр, йә немецтар мушкага алырга мөмкин.* Д. Юлтый.

**АҢЛАТМА** *и.* Эш-хәл, мәсьәлә йәки башҡа нәмәнең асылын төшөндөрөп, мәғәнәһен асып биргән һүҙ йәки яҙма. *Аңлатма биреү. Фәнни аңлатма.*

**АҢЛАТМАЛЫ** *с.* Аңлатма бирелгән, аңлатмаһы булған. *Аңлатмалы һүҙлек.*

**АҢЛАТЫЛЫУ** *к. төш. кар.* **аңлатыу.** *Аңлатылган мәсьәлә. Аңлатылган һүҙ.*

**АҢЛАТЫУ** *к.* **1.** Ниҙең дә булһа асылын, мәғәнәһен асып биреү; төшөндөрөү. *Мәсьәләне аңлатыу. Һүҙҙе аңлатыу.* ■ *Айыугола́к кыҙ янына килеп, үҙенең хәлен һөйләп аңлаткан* (Әкиәттән).

**2.** Уй-тойғоно, фекер-ниәтте белдереү. *Һөнәрсе шуның менән һүҙ бөткәнен аңлатып, иҙәнгә куйган көршәкте кулына ала.* З. Биишева. *Кайгыны ла, шатлыкты ла кешеләр йыр менән аңлата.* Б. Бикбай.

**3.** Ниндәйҙер мәғәнә белдереү, төшөнсә биреү. *Ғәрәп телендә Хәсән — матур, Мәймүнә — бәхетле тигәнде аңлата.*

● *Аңһыҙга аңлатканса, аңлы эшен бөтөрөр.* Әйтем.

**АҢЛАУ** *к.* **1.** Нимәнеңдер әйтелгән, мәғәнәһен тейешенсә ҡабул итеү; төшөнөү. *Мәкәләне аңлау. Мәсьәләне аңлау. Һабакты аңлау.* ■ *Суфыйҙарҙан наҙаныраҡ кеше лә юк. Һөйләгән һүҙҙәрен аңлап торһаң, шайтан кеүек, һүҙе һайын алдар имде* (Мөнәжәттән).

**2.** Кемдеңдер уй-тойғоно, фекерҙе, ниәтте һи-

ҙеүе; төшөнөүе. *Бер-береңде аңлау. Кешене аңлау.* ■ *[Тимер:] Мин һеҙҙе аңлап етмәйем, Мария Николаевна...* Б. Бикбай. *Минең шул тулҡынды, йөрәгемде Мәрйәм генә аңлай, шуның өсөн мин уга гына йырларга тейешмен.* Д. Юлтый.

**3.** Эш-хәлдең йәки башҡа нәмәнең айышына төшөү; төшөнөү. *Хатаны аңлау.* ■ *[Юлия:] Ишбулды, туганкайым, бик дөрөҫ аңлайһың, бик дөрөҫ эшләйһең.* Һ. Дәүләтшина. *Егет эштең ниҙә икәнен ошо ерҙә генә аңлап алган* (Әкиәттән).

**4.** Икенсе бер телдә һөйләгәнде төшөнөү. *Инглизсә аңлау.*

♦ **Әйткәнде аңлау** кешенең кәңәш-шелтәһен ҡабул итеү.

**АҢЛАШЫЛЫУ** *ҡ.* Аңға барып етеү. *Мәсьәлә аңлашылгандай булгас, Фәхри менән Байназар сыгып китте.* Б. Бикбай.

**АҢЛАШЫУ** *ҡ.* **1.** Бер-береңдең уй-теләгенә төшөнөү. *«Әйткәнде ҡабул итеүеңә рәхмәт, мөгәллим,— тине оло инәйем.— Шулай башта уҡ аңлашып эш иткән яҡшы».* М. Кәрим. *[Әбей — егеткә:] Һин ҡамыш араһынан сыҡ та, ҡыҙҙың янына барып, мамыҡ тунын бир. Ҡалган ягын үҙегеҙ аңлашырһыгыҙ* (Әкиәттән).

**2.** Бер-береңдең әйткәнен, һөйләгәнен аңлау. *Баҙарҙары уның шаулап тора, тиҫтәләгән телдә аңлашып.* Р. Бикбаев.

**АҢЛЫ** *с.* **1.** Фекер итеү, уйлау һәләте булған. *Кеше — аңлы йән эйәһе.*

**2.** Аңлап, белеп эш итә алыусан. *Ул миңә ҡараганда уҡымышлы ла, аңлы ла кеше ине.* З. Биишева.

**3.** Алдынғы ҡарашлы. *[Дауытов:] Ә һеҙ .. колхозсылырҙың аңлы өлөшөнә ныгыраҡ таяныгыҙ.* Б. Бикбай. /Алдынғы ҡарашҡа нигеҙле. *Эшкә аңлы мөнәсәбәт. Аңлы тәртип.*

**АҢРА** *с.* Тейешенсә уйлау, фекер итеү һәләтенән мәхрүм; аҡылға самалы; иҫәр. *[Нәсимә:] Теге аңра залга индереп ебәрмәһә ярар ине [ҡунаҡтарҙы].* Н. Иҙелбай. *Халыҡ аңра, .. аңра булмаһа, һугышҡа бармаҫ ине.* Д. Юлтый. *Бер аҙҙан аңра әтәстең йөндәре генә тороп ҡала* (Әкиәттән). /Әрләгәндә әйтелә. *Аңра! Унды бөткән, буйы-һыны еткән, ә аҡыл ултырмаган!* З. Биишева. **Аңра бәрәк** кәмһеткәндә, әрләгәндә әйтелә. *Кит, аңра бәрәк, мин һине йүнле кеше тип йөрөйөм тагы!*

**АҢРАЛАНЫУ** *ҡ.* Аңраға әйләнеү, аңра булыу. *Ҡарт аңраланып бөткән.*

**АҢСЫ** *и. иҫк.* Һунарсы, аусы.

**АҢ-ТАҢ: аң-таң булыу** аптырау, шаҡ ҡатыу. *Зилский .. ҡобараһы осоп, ҡолап китте. Халыҡ аң-таң булып ҡалды.* Ғ. Дәүләтшин.

**АҢ-ТОҢ: аң(ды)-тоң(до) белеү** төрлө эш-хәлдең асылын, айышын һиҙеү. *Эштең аңын-тоңон белеү.* ■ *[Әхмәҙи] малайҙарҙы сәмләштерҙе. Аңды-тоңдо белмәгән малайҙар уның һайын дәртләнеп эшләне.* Ж. Кейекбаев.

**АҢҺАУ** *ҡ. диал.* Аңдыу.

**АҢҺЫҘ** *с.* **1.** Аңлап, белеп эш итә алмаған. *[Хасбулат:] Аңһыҙ башҡорт һалдаттарының тәүләп күҙен асҡан шул. [Ш. Хоҙайбирҙин] инде.* З. Биишева.

**2.** Алдынғы ҡарашҡа эйә булмаған. *Колхозсыларҙың аңһыҙ ҡатламы фермаға дөйөмләштерелгән һыйырҙарын кире алыуға тиклем барып етте.* Б. Бикбай.

**3.** Көтөлмәгән, ҡапыл килеп сыҡҡан. *Аңһыҙ үлем.*

**АҢҺЫҘҘАН** *р.* Уйламағанда, көтмәгәндә; аңғармаҫтан. *Бер көндө йылҡы көтөп йөрөгәндә, аңһыҙҙан ике-өс һыбай [Аҡназарҙың] көтөүен килеп баҫа.* М. Буранғолов./Алдан ниәт итмәгәндә, көтмәгәндә; яңылыш. *Һунарға барған саҡта, Ишәй аңһыҙҙан шаршыға осҡан.* «Башҡортостан ҡыҙы», 1968, № 9.

**АҢҺЫҘЛАНЫУ** *ҡ.* Аңһыҙға әйләнеү; аңраланыу. *Аңһыҙланып йөрөү.*

**АҢҺЫУ** *ҡ.* Арып хәлһеҙләнеү. *Бала илап аңһып бөткән.*

**АҢШАЙҒАН** *с. ҡар.* **аңыш** [1].

**АҢШАЙТЫУ** *ҡ.* Шаҡ ҡатырыу, аптыратыу.

**АҢШАЙЫУ** *ҡ.* **1.** Ауыҙ асып ҡатыу. *Аңшайып тороу.* /Иҫ-аҡылды йыя алмай шаҡ ҡатыу.— *Мин .. аңшайып ҡарап тик торам, [иптәштең] ни һөйләгәнен аңламайым.* Ҡ. Ибәтуллин.

**2.** Ул-был эште тиҙ генә абайлай алмай, күрер-күрмәҫ булыу. *[Азамат — Ильясҡа:] Мин китәм. Аңшайма — тагы ла ҡарауыл ҡалаһың.* Ш. Бикҡол.

**АҢШАЙЫШЫУ** *ҡ. урт. ҡар.* **аңшайыу.** *Аңшайышып тороп ҡалыу.*

**АҢШАНЛАУ** *ҡ.* Муйынды һуҙып, алан-йолан тирә-яҡҡа ҡарау.

**АҢЫР** *и.* Аҡ төшкән ҡара ҡанатлы, һарғылт ерән төҫлө эре өйрәк.

**АҢЫРЫУ** *ҡ. диал. ҡар.* **аңдыу** [1].

**АҢЫШ** [1] *с.* Тиҙ генә аңлай, төшөнә алмаусан. *Аңыш кеше.*

**АҢЫШ** [2] *и. диал.* Айыш. *Аңышына төшөнөү.*

**АҢЫШЛЫ** *с. диал.* Аңлайышлы.

**АҢЫШҺЫҘ** *с. диал.* **1.** Аңлайышһыҙ.

**2.** Аңра. *[Зиннәт:] Һуҡыр, һуҡыр мин! Аңышһыҙ, һуҡыр!* Ф. Иҫәнғолов.

**АҢЫШЫУ** *ҡ. диал.* Аңғарыу. *Ҡараһаҡал Антондан бөтә эште аңышҡас, кәләм-ҡағыҙын алып, .. ҡаяла ултырып хат яҙған.* «Ҡараһаҡал».

**АО́РТА** [*рус.* ⟨ *гр.*] *и.* Йөрәктең һул яртыһынан сығып, үпкәнән башҡа тәндең бөтә ағзаларын ҡыҙыл ҡан менән туҡландыра торған иң йыуан тамыр.

**АП-** *киҫ.* **А** өнө менән башланған сифатҡа һәм рәүешкә ҡушылып, артыҡлыҡ дәрәжәһен яһай. *Ап-аҡ. Ап-арыу. Ап-асыҡ.*

**АПА** [1] *и. диал. ҡар.* **апай** 2.

**АПА** [2] *и. диал. ҡар.* **бабай** 2.

**АПАЙ** *и.* **1.** Йәшкә үҙеңдән оло булған бер туған ҡатын-ҡыҙ. *Оло апай. Кесе апай. Уртансы апай.*

**2.** Үҙеңдән оло, ата-әсәңдән кесе булған ҡатын-ҡыҙ туған.

**3.** Үҙеңдән оло, ата-әсәңдән кесе булған һәр ҡатын-ҡыҙ. *Киң урындыҡ ситендә илле йәштәр самаһындағы бер апай йөн иләп ултыра ине.* Һ. Дәүләтшина.

**4.** Уҡытыусы ҡатын-ҡыҙға ололап өндәшеү һүҙе.

**5.** Йәш ҡатын (оло ҡатындың балаларына ҡарата). /Үгәй әсәй.

**АПАЙЫУ** *к. диал.* Аңшайыу, һемәйеү. *Апайып тороп ҡалыу.*

**АПАЛНАЙ** [*рус.* опальный] *с. диал.* Эйәһеҙ, ҡәҙерһеҙ — *Һау ҙа әсет, һау ҙа әсет! Апалнай беләк бар тип беләһеңме әллә бында.* И. Ғизззәтуллин.

**АПАЛЫ-ҺЕҢЛЕЛЕ** *р.* Апай менән һеңле бергәләп. *Апалы-һеңлеле килгәндәр.*

**АПАЛЫ-ЭНЕЛЕ** *р.* Апай менән эне бергәләп. *Апалы-энеле уҡып йөрөйҙәр.*

**АПАН** *и. диал.* Япан.

**АПАНЛАУ** *к. диал.* Һап-һоп итеп, шапылдатыу (ауыҙҙы). *Апанлап ашау.*

**АПАРА** [*рус.* опара] *и.* **1.** Әсеп сыҡҡан ҡамыр. *Повар .. ҡабарған һарғылт апараға әллә ниндәй порошоктар һалып, йоморткалар һытып, .. һары май койоп ебәрҙе.* Һ. Дәүләтшина.

**2.** Һыуға он һалып болғатылған май аҙығы. *Һыйырҙарға өс килограмм ондан эшләнгән апара әсереләэ.* «Совет Башҡортостаны», 1968, 16 февраль. /*кусм.* Бик шыйыҡ, тәмһеҙ аш. *Билгауыңды тартыбыраҡ быуmaһаң, ҡорһаҡты апара менән тултырырға ла етмәй (акса).* С. Мифтахов.

**3.** *диал.* Ҡырған картуфтың ҡалдығы, төпрә.

♦ **Апара ҡорһаҡ** *кар.* **ҡорһаҡ** 1.

**АПАРТЕЙД** [*рус.*] *и.* Илдәге халыҡты раса ирекһеҙлеге нигеҙендә көсләп айырыу политикаһы.

**АПАРТЫУ** *к. йөкм. кар.* **апарыу.**

**АП-АРУҠ** *р. һөйл.* Яҡшы ғына, ярайһы ғына, һәйбәт кенә. *Мандолинала ап-арук уйнау. [Иргәле] ай самаһы үтеүгә, бер нисә көйҙө ап-аруҡ уйнай башланы.* Н. Мусин.

**АП-АРЫУ** *с.* Арыу ғына, яҡшы ғына. *Ап-арыу кеше.* // *Ап-арыу эшләү. Ҡумыҙҙа ап-арыу уйнау.* **Ап-арыу уҡ** 1) бик үк насар түгел, арыу ғына. *Ап-арыу уҡ ат, егеп йөрөүгә ярай;* 2) байтаҡ ҡына, күп кенә. *Ап-арыу уҡ ер ул беҙҙең сабынлыҡ.*

**АПАРЫУ** *к. ҡыҫк. ф. һөйл.* Алып барыу. *Киноға апарыу. Апара ятыу. Апарып биреү. Апарып ҡуйыу. Апарып сығарыу. Апарып ташлау. Апарып һалыу.* ■ — *Бар, булмаһа, атайыңа айран апарып кил.* К. Мәргән.

**АПАТИТ** [*рус.* ⟨ *гр.*] *и.* Ер аҫтынан атылып сыҡҡан күп кенә тоҡомдарҙың состав өлөшө булған минерал (башлыса фосфор ашламалары етештереүҙә ҡулланыла).

**АПАТИЯ** [*рус.* ⟨ *гр.*] *и.* Теләк, маҡсатһыҙ, уйтойғоһоҙ күңел бушлығы.

**АПАУ** *ымл.* Балаларҙы иркәләп йәлләгәндә әйтелә. *Апау, ни булған үҙекәйгенәһенә.*

**АПАУЛАУ** *к.* Йылы һүҙ менән һөйөп иркәләтеү; наҙлау. *[Юлдыбикә — ире хаҡында:] Ирендәре көлөп тороп ине. Һүҙ ҡушһа, эй, кәләш, тип, апаулап ҡушыр ине.* Т. Хәйбуллин.

**АПЕЛЛЯЦИЯ** [*рус.* ⟨ *лат.*] *и.* **1.** *юр.* Түбәндәге суд органының ҡарарын яңынан ҡарауҙы һорап юғары органға яҙылған мөрәжәғәт. *Апелляция биреү.*

**2.** Ярҙам, кәңәш һорап яһалған мөрәжәғәт. *Апелляция яһау.*

**АПЕЛЬСИН** *и. кар.* **әфлисун.**

**АПҠАЙТЫУ** *к. ҡыҫк. ф. һөйл.* Алып ҡайтыу. *Бесән апҡайтыу. Ҡунаҡ апҡайтыу.* ■ *[Егет:] Мин һиңә .. хан ҡыҙҙары ғына тағып йөрөй торған беләк апҡайттым.* Й. Солтанов.

**АПҠАЛЫУ** *к. ҡыҫк. ф. һөйл.* Алып ҡалыу. *Айырып апҡалыу. Ебәрмәй апҡалыу.*

**АПҠАСЫУ** *к. ҡыҫк. ф. һөйл.* **1.** Алып ҡасыу. *Кеше нәмәһен апҡасыу. Апҡасып китеү.*

**2.** Баш бирмәй сабыу (атҡа ҡарата). *Ат апҡасып китте.*

**АПОГЕЙ** [*рус.* ⟨ *гр.*] *и. астр.* Ай йәки яһалма юлдаш орбиталарының Ер үҙәгенән иң алыҫ нөктәһе.

**АПОЛИТИЗМ** [*рус.* ⟨ *гр.*] *и.* Кешенең ижтимағи-политик тормошта ҡатнашлыҡ итеүҙән ҡасыуы, политика мәсьәләләренә ғәмһеҙлеге.

**АПОЛИТИК** *с.* Ижтимағи-политик тормоштан ситләшкән, политика мәсьәләләренә ғәмһеҙ булған. *Аполитик кеше.*

**АПОРТ** [*рус.*] *и.* **1.** Эре, тәмле емеш бирә торған алма ағасы.

**2.** Шул ағастың алмаһы.

**АПОСТРОФ** [*рус.* ⟨ *гр.*] *и.* Хәреф өҫтөнә ҡуйыла торған өтөргә оҡшаш билдә.

**АППАРАТ** [*рус.* ⟨ *лат.*] *и.* **1.** Билдәле бер эш башҡарыу өсөн хеҙмәт иткән ҡорамал, прибор. *Кино аппараты. Телефон аппараты.*

**2.** *Физиол.* Организмдың бөтөн бер функция башҡарған ағзалары. *Тауыш аппараты. Тын алыу аппараты.*

**3.** Хужалыҡтың, эштең берәй тармағын хеҙмәтләндергән ойошмалар. *Дәүләт аппараты. Райком аппараты. Сауҙа аппараты.*

♦ **Ғилми аппарат** ғилми хеҙмәт өсөн файҙаланылған материал һәм ҡулланмалар.

**АППАРАТСЫ** *и.* Аппарат (1 мәғ.) менән эш иткән кеше.

**АППАРАТУРА** [*рус.*] *и. йыйн.* Билдәле бер эште башҡарыу өсөн хеҙмәт иткән аппараттар, ҡорамалдар. *Кино төшөрөү аппаратураһы. Лаборатория аппаратураһы.*

**АППЕНДИКС** [*рус.* ⟨ *лат.*] *и. анат.* Һуҡыр эсәктең үҫендеһе. *Аппендиксты алып ташлау.*

**АППЕНДИЦИТ** *и. мед.* Һуҡыр эсәк үҫендеһенең шешеүе. *Аппендицитҡа операция яһау.*

**АППЕТИТ** [*рус.* ⟨ *лат.*] *и.* **1.** Ашау теләге, ашҡа булған барым. *Аппетит артыу. Аппетит асылыу. Аппетит менән ашау. Аппетит юғалыу.* ■ *Биргән аштары елп итеп ҡалды, кесе телгә лә йоҡманы, аппетит шул тикле ҡутәрелеп китте, баяғынан да ныҡ асыҡтырҙы.* Д. Юлтый.

**2.** *кусм. кар.* **нәпсе.** *Империалистарҙың долларға булған аппетиты кешелеклек, ғәҙеллек, намыҫ һәм әҙәп тигән нәмәне бөтөргән.* Ә. Харисов.

**АППЕТИТЛЫ** *с.* Аппетит уятырлыҡ; тәмле. *Аппетитлы аш.*

**АППЛИКАЦИЯ** [*рус.* ⟨ *лат.*] *и.* **1.** Төҫлө ҡағыҙ, туҡыма киҫәктәрен йәбештереп йәки тегеп һүрәт яһау ысулы.

**2.** Шул ысул менән яһалған биҙәк, һүрәт һ. б.

**АПРЕЛЬ** [*рус.* ⟨ *лат.*] *и.* Календарь йылының дүртенсе айы (*кар.* **календарь**). *Апрель аҙағы. Апрель башы. Апрель артыҡ йылы булһа, май*

*һалкын, елле-ямғырлы булыр.* Һынамыш. *Апрелдең алтыһында аяҙ булһа, йәй коро килер, болотло булһа, ашлыҡ уңыр.* Һынамыш.

**АПРОБА́ЦИЯ** [*рус.* ⟨*лат.*] *и.* **1.** Тикшереү, һынау нигеҙендә бирелгән рәсми хуплау. *Апробация биреү. Апробация үтеү.*

**2.** *а. х.* Иң яҡшыларын орлоҡҡа файҙаланыу маҡсатында ауыл хужалығы культураларының сорт сифатын билдәләү. *Баҫыу апробацияһы.*

**АПСАЙЫУ** *ҡ.* Үрә баҫыу, һын турайтыу. *[Күсмәҫ хан:] Мин бер болан осраткайным, атмаҡсы булып, йәйәмде ҡулға алһам, болан апсая баҫты ла торҙо, имсәктәренән һөтө эйеп китте.* «Ҡуҙыйкүрпәс менән Маянһылыу».

**АПСЫҒЫУ** (апсыҡ*ғ*) *ҡ. ҡыҫҡ. ф. һөйл.* Алып сығыу. *Баланы апсығыу. Өйҙән апсығыу. Һыуҙан апсығыу. Ярҙан апсығыу.* ■ — *Аһылбай, бар, атты апсыҡ, халыҡ ҡүрһен.* З. Биишева.

**АПТАЛ** *и. диал.* Соҡор ҡаҙғанда сыҡҡан тупраҡ өйөмө.

**АПТЕ́КА** [*рус.* ⟨*гр.*] *и.* Дарыу һәм һаулыҡ һаҡлау өсөн кәрәкле төрлө нәмә һата торған ойошма. *Аптеканан дарыу алыу.*

**АПТЕКАСЫ** *и.* Аптекала дарыу әҙерләгән кеше; фармацевт.

**АПТЕ́ЧКА** [*рус.*] *и.* Тәүге ярҙам өсөн кәрәк булған дарыу һәм башҡа нәмәләр.

**АПТЫРА́Ҡ** *и. һөйл.* Нисек итергә, ни эшләргә белмәй аптырағанда ҡулланылған һүҙ. *Кемдән барып кәңәш һорарға ла белмәйем. Аптыраҡ!*

**АПТЫРАНДЫРЫУ** *ҡ.* Аптырашҡа ҡалдырыу, аптыратыу.

**АПТЫРАНЫУ** *ҡ.* Ниҙеңдер айышына, мәғәнәһенә, тәртибенә төшөнә алмай, ни хәл итергә белмәй уйға ҡалыу. *Аптыранып ултырыу.*

**АПТЫРАТЫУ** *ҡ.* **1.** Ғәжәпкә ҡалдырыу. *[Гөлйөҙөмдөң] илай-көлә һөйөнсө һорауы Шәһиҙә эбейҙе аптырат[ты].* Һ. Дәүләтшина.

**2.** Сараһыҙ хәлгә ҡуйып, уйға ҡалдырыу. *Аптыратҡан донъя бит был Ғабдрахман муллаһы.* Ш. Бабич.

**3.** Йәнгә тейәү; йонсотоу, йөҙәтеү, ҡанғыртыу. *Шулай йөрөнө Зәйнәп йыл буйы. Унан һауыҡты ул, докторҙар ҙа хәҙер аптыратып бөтмәйҙәр.* Ғ. Сәләм. *Ул [секретарь] йәш кадрҙар таптырып аптырата мине.* Б. Бикбай.

**АПТЫРАУ** *ҡ.* **1.** Ниҙелер тейешленән йәки ғәҙәттәгенән ят күреү; ғәжәпләнеү. *Аптырап китеү. Аптырап тороу.* ■ *Был ниндәй әкәмәт икән, тип аптырап ҡарап торам.* Т. Йәнәби. /Ниндәйҙер хәлге төшөнә алмай яфаланыу; ғәжәп ҡалыу. *Көнө лә, төнө лә эш менән үтә. Үҙемдең шул хәтлә бәхетһеҙ булғаныма аптырайым мин.* Д. Юлтый.

**2.** Сара тапмай, ни хәл итергә лә белмәй уйға ҡалыу. *Урал, ни эшләргә, ҡайҙа барырға, тип аптырап торғанда, арҡаһына ауыр тоҡ йөкмәгән бил һылыу бер ҡыҙ уҙып барғанын күреп алды, ти.* «Урал батыр». *Аптырағас, ханға барып фатир һораған ул* (Әкиәттән).

**3.** Берәй ҡыйын хәлдән интегеү; яфаланыу.— *Советҡа ситса килгән, бик аптырағандарға бүлеп бирәбеҙ, тигәйнеләр.* Һ. Дәүләтшиан.

**4.** Берәй нәмәгә мохтажлыҡ кисереү, мохтаж булыу. *Бесәнгә аптырау. Утынға аптырау.*

◆ **Аптырағандан бер һүҙ** ни тиергә белмәй әйткәнде беллерә.

● *Аптыраған ҡатын абышкаһын атай тигән.* Әйтем. *Аптыраған өйрәк арты менән ҡулгә сумған.* Мәҡәл.

**АПТЫРАШ** *и.* Ни эшләргә белмәй сараһыҙ булып, уйға ҡалған хәл. *Аптырашҡа ҡалдырыу. Аптырашта ҡалыу.* ■ *Мең төрлө уй, ҡатты баш, ни эшләргә лә аптыраш.* Ш. Бабич.

● *Аптыраш менән йөҙәш икеһе кергән өйҙәш.* Мәҡәл.

**АПТЫРАШЫУ** *ҡ. урт. ҡар.* **аптырау.** *Өс туған ҡыуанышып күрешә. Өс сауҙагәр аптырашып, нишләргә белмәй, ҡурҡышап тора* (Әкиәттән).

**АПҺЫН** *и.* Ағай-эненең ҡатындары (бер-береһенә ҡарата); килендәш. *Маңлайыңа аш һөртһә, һиҫкәнмә һин, ҡыҙыҡай: аш күрмәгән, тип һөйләр апһындарың, ҡыҙыҡай* (Туй йырынан).

● *Апһынды апһын күрә алмай.* Әйтем.

**АПҺЫН-ӘЗЕ** *и. йыйн. һөйл.* Ғаиләләге ҡатын-ҡыҙ (апһындар, ҡәйенһеңлеләр һ. б.).

● *Апһын-әзе татыу булһа, аш күп булыр.* Әйтем.

**АПЫЙ** *өндш. диал.* Апайға өндәшкәндә әйтелә.

**АР** [1] [*рус.* ⟨*фр.*] *и.* Йөҙ квадрат метрға тигеҙ булған ер үлсәү берәмеге; гектарҙың йөҙҙән бер өлөшө.

**АР** [2] *и. иҫк.* Удмурт халҡының башҡорттарҙа йөрөгән әүәлге исеме.

**АР** [3] [*гәр.*] *и. иҫк.* Оятсылыҡ, намыҫ, ғәр.

**АРА** [1] *и.* **1.** Ике нәмәнең уртаһы, ике нәмәне айырған урын. *Бармаҡ араһы. Мөгөҙ араһы. Рәт араһы. Тау араһы.* ■ *Гөлнур шулай һөйләнеп ултыра торғас, ике бүлмә араһындағы таҡта стенаға йоҙрого менән бер нисә тапҡыр һуғып ҡуйҙы.* М. Тажи.

**2.** Бер ерҙән икенсе ергә тиклем булған алыҫлыҡ. *Алыҫ ара. Бер саҡырым ара. Яҡын ара.* ■ *Халыҡ Ырымбур араһын ҡуна ятып йөрөй. Ә Хисамый был араны атын бер ашатмай барып етә.* Б. Бикбай. *Ике көнлөк араны Йүгерек батыр һыңар аяҡлап йүгергән* (Әкиәттән). **Ара ҡунып йөрөү** алыҫ юлға ҡуна-ҡуна барыу. *Ара ҡунып йөрөп дүрт-биш көн ваҡыт үтеп китә.* Һ. Дәүләтшина.

**3.** Күпмелер дауам иткән ваҡыт өҙөгө. *Бер арала. Буш арала. Был арала. Теге арала. Ҡайһы арала.* ■ *Фатималар ҡунаҡҡа килеп аҙна араһы ятып ҡайттылар.* Ж. Кейекбаев. **Ул (йәки шул) ике арала** шул хәтле ҡыҫҡа ваҡыт эсендә. *Күп тә үтмәй халыҡ йыйылды, ул ике арала муллалар Ғәйни ағайҙы ҡанға батырып ташлағайнылар.* Т. Йәнәби. /Бер хәл-ваҡиғанан икенсеһенә тиклем үткән ваҡыт (*ғ*ан/ *ғ*ән ялғаулы сифат ҡылымынан һүң килә). *Һуғыш тынған араларҙа башҡорттар ҡурайға ҡушылып йырларға, дәртләнеп бейергә, шиғыр тыңларға ярата.* «Совет Башҡортостаны», 1965, 6 май.

**4.** *ҡусм.* Кешеләрҙе бер-береһенә бәйләгән мөнәсәбәт. *Ара төҙәлеү. Ара һыуыныу. Ара яҡшырыу. Арабыҙ боҙолдо.* **Араға инеү** кешенең эшенә, тормошона, мөнәсәбәтенә ҡыҫылыу. *Һүҙ араһына инеү. Эш араһына инеү.* **Аранан ел дә**

**үтмәҫ** (*йәки* **үтерлек түгел)** дуҫлыҡ, бәйләнеш бик ныҡ, тигән мәғәнәлә әйтелә. *Без Мәғәән менән, ай-һай, ниндәй дуҫтар инек! Арабыҙҙан ел дә үтерлек түгел ине хатта.* М. Кәримов.

**5.** Ниҙәндер уртаһындағы яй, бушлыҡ. *Ашлыҡ араһы. Урман араһынан. Үлән араһынан.* ■ *Ҡамышлыҡ араһынан ике яклап аҡкоштар күлде буйлап йөҙөп китте.* Ш. Бабич.

**6.** 3-сө зат эйл. сығн. һәм у.-в. клш. аффикстары менән бәйләүес функцияһында ҡулланыла (*кар.* **араһынан, араһында**).

◆ **Ай араһы** иҫке ай бөтөп, яңы ай тыуғанға тиклемге ваҡыт. *Ай араһы яуынлы була.* **Араға төшөү** вәғәҙәләшкән кешеләрҙең эшенә ҡыҫылып болартыу. **Аранан китеү** вафат булыу, үлеү. **Аранан һыу үткеһеҙ** сикһеҙ татыу, тигән мәғәнәлә әйтелә. *Һәйбәт торалар, араларынан һыу үткеһеҙ.* **Ара төшөү** кешенең эше, ниәтенә ҡыҫылып, ҡаршы эш итеү; арҡыры төшөү. **Ер менән күк араһы** ныҡ айырыла, яҡынлыҡ йәки оҡшашлыҡ юҡ, тигән мәғәнәлә әйтелә. *Ә быны мин беләм. Ҡыҙҙар менән ҡыҙҙар араһы ла — ер менән күк араһы кеүек була.* Һ. Дәүләтшина. **Ике ара** ике кеше араһындағы мөнәсәбәт. *Ике арала йөрөү. Ике арала ҡалыу.* **[Кешенең] хәл араһына инеү** *диал.* ауыр хәлде аңлау. *Апаҡайым асыҡтым. Берәр ҡалаҡ бирһәнә, хәл арама инһәнә* (Әкиәттән). **Ни [ике] арала** нисек улай тиҙ. *Ни арала өлгөргән!* **Тәртә араһына инеү** тәртипкә инеү, тәртипкә килеү. **Һүҙ ара һүҙ сығып** һөйләшә-һөйләшә килеп, һүҙҙән-һүҙ сығып. *Һүҙ ара һүҙ сығып, үткән замандарға төшөп киттек.* **Ул арала [булмай]** бер-бер эш-хәрәкәт артынса уҡ икенсеһе булғанды белдерә.

● *Алабута аш булмаҫ, ара бутаған иш булмаҫ.* Әйтем. *Әҙәм менән әҙәм араһы — ер менән күк араһы.* Әйтем.

**АРА**[2] *и.* Ырыу эсенә ингән вағыраҡ төркөм. *Ҡыпсаҡ араһы үҙен ауылдың аҫаба башҡорто һанай. Улар ишле лә, берҙәм дә халыҡ.* Б. Бикбай.

**-АРА**[3] **1.** Күмәк нәмәнең бәйләнешен белдергән ҡушма сифаттың икенсе өлөшө булып килә. *Колхоз-ара төҙөлөш. Халыҡ-ара конференция. Район-ара кәңәшмә.*

**2.** Күмәк заттың ҡатнашлығын белдергән ҡушма рәүештең икенсе өлөшө булып килә. *Икәү-ара һөйләшәү. Үҙ-ара килешеү.*

**АРАҒАС** *и. диал.* Борғоса.

**АРАЗ** [*ғәр.*] *и. иҫк.* Талаш-тартыш, ыҙғыш.

**АРАЗЛАШЫУ** *к. иҫк.* Талашыу, ыҙғышыу. *[Ҡыҙ — батшаға:] Беҙ бер ваҡыт боҙолошоп, аразлашып китербеҙ. Шул ваҡыт мин .. иң һөйгән, күңелең теләгән нәмәне алып сығып китермен* (Әкиәттән).

**АРАЙ** *и.* Һыу баҫа торған болон. *Ташлы-ташлы Уралымдың аҡланы, арайҙары. Таштан-ташҡа һикерешә Аҡҡайын малайҙары.* М. Кәримов.

**АРАЙЫШ** [*фарс.*] *и. иҫк.* Биҙәк, зиннәт.

**АРАҠЫ** [*ғәр.*] *и.* Спирт ҡатыш иҫерткес эсемлек. *Аҡ араҡы. Ҡыҙыл араҡы. Араҡы заводы. Араҡы шешәһе.*

**АРАЛ** *и.* **1.** Йылға уртаһында ҡалған ҡоро ер; утрау. *Ауыл ҡаҙҙары көндөҙ ашлыҡ төбөнә төшә лә, төнгә аралға инеп ҡуна.* /Йылға бөгөлө араһында ҡалған ҡоро ер.

**2.** *диал.* Ике йылға башын айырып торған ҡалҡыу ер. *Һыу айырғыһы.*

**АРАЛАНЫУ** *к.* **1.** *Төш. кар.* **аралау** 1.

**2.** Бер төркөмдән бүленеп сығыу; айырылыу. *Ҡолон өйөрҙән араланды. Туптан араланған ҡош.*

**3.** Йырылып сығыу, ҡотолоу; арыныу. *[Хафиз ҡарт:] Һеҙ икегеҙ ҙә ҡулаҡ ҡоллоғонан көс хәлгә араланып, аяҡҡа ғына баҫа башланығыҙ.* М. Тажи.

● *Араланған ҡуйҙы бүре алыр.* Мәҡәл.

**АРАЛАУ** *к.* **1.** Бер нәмәнең араһын киңәйтеү; аралы итеү. *Ағасты аралап ултыртыу.*

**2.** Нимәнеңдер асыҡ еренән, араһынан үтеү. *Урман аралап үткән юл.* ■ *Мөһабәт ағастарҙы сағыу яҡтылыҡ аралай.* Ә. Хәкимов. *Ул саҡта ла бында лимон үҫкән, бөркөт осҡан тауҙар аралап.* Р. Ниғмәти./Ниҙәндер араһынан юл ярыу. *[Шакир] ашлығын аралап, нәҙек загондың әле ул, әле был яғына сыға.* Һ. Дәүләтшина. *Халыҡ төркөмөн аралап, мөһабәт буйлы, ҙур сал һаҡаллы, оҙон аҡ тун кейгән яурынтаҡ ҡарт алға сыҡты.* Ә. Ихсан.

**3.** Йыш, ҡуйы йәки уҡмашҡан нәмәнең араһынан ниҙер йөрөтөп, айырғылау. *Сәсте аралау.* ■ *Әхмәҙулла бабай һаҡалын аралай-аралай тағы алыҫҡа текләне.* Ә. Вахитов.

**4.** Ҡуйы сәселгән нәмәне һирәкләү. *Сөгөлдөрҙө аралау хәҙергә ҡул менән эшләнә.* Й. Гәрәй.

**5.** Берәй нәмәне икенсе бер нәмәнән башҡа айырыу. *Халыҡ хәтере .. яҡшыны ямандан аралап, кәҙерләп йыя бара.* «Совет Башҡортостаны», 1967, 10 март. /*күсм.* Береһен ситләтеп, икенсеһен яҡынлатып, төрлө мөнәсәбәт күрһәтеү; айырып ҡарау. *Ҡояш кеше араламай, гүзәл йәшәй донъяла. Олоһона, кесеһенә ул бер тигеҙ йылмая.* Т. Арслан.

**6.** Һуғышҡан йәки ыҙғышҡан кешеләрҙе бербереһенән айырыу. *Ул [ағай] мине иҫтән яҙҙырғанса туҡмай ине, .. Кәрим бабай килеп араланы.* М. Ғафури./Ауыр хәлдән ҡотҡарыу; яҡлау. *Үлемдән аралау.* ■ *[Көнбикә:] Батыр ирҙәр үҙе яҡламаһа, кем аралар меҫкен халыҡты.* Б. Бикбай.

**7.** Берәмекләп йөрөп ҡыҙырыу; байҡау. *Инструктор ебәрелеп, кантондарҙы аралап ҡайтҡас та, кантон комиссияларының эшмәкәрлегенә ҡарата сара күреләсәк.* Ш. Хоҙайбирҙин. *Абдулла ахун ил аралап, һалым һалған һәр йортҡа* (Халыҡ йырынан).

◆ **Аш аралау** бер кешегә яҡшыраҡ, икенсеһенә насарыраҡ ашатыу; тамаҡ айырыу. *Еңгәм аш араланы, ағайым өйҙә юҡта йүнле ашатманы.* **Ен** (*йәки* **шайтан) аралау** араға кемдер төшөп эште боҙоу. *[Үмәр:] Ҡыҙыңдың ике ағаһының береһен кешегә атлатма. Изге эште ен аралап ҡуйһа, алдың өлөштө.* Һ. Дәүләтшина. **Һалҡын аралау** *диал.* һыуыҡ тейеү.

**АРАЛАШ** *с.* **1.** Төрлө нәмә үҙ-ара ҡатнаш, алмаш-тилмәш. *Аралаш ашлыҡ. Шыршы менән аралаш имәнлек. // Аралаш килеү. Аралаш ултырыу. Аралаш үҫеү. Аралаш һалыу.*

**2.** *р. мәг.* Ниҙер бергә, ҡатышҡан, ҡатыш; ҡатнаш. *Арыш аралаш бойҙай. Ҡар аралаш ямғыр. // Йәш аралаш ҡөләү. Иҫ аралаш һаташыу.* ■ *Хисам йоҡо аралаш ят кешеләрҙең аяҡ тауышын ишетә* (Әкиәттән).

**3.** *бәйл. мәғ.* Ваҡыт бирәмеген белдергән һүҙҙәр менән килеп, ниҙеңдер бер бәрәмек аша эшләнгәнен йәки ғәмәлгә килгәнен белдерә. *Клубта көн аралаш кино күрһәтелә. Йыл аралаш ҡыш һыуыҡ килә.*

♦ **Аралаш урман** япраҡлы һәм ылыҫлы ағастарҙан торған урман. **Аралаш һан** *мат.* бөтөн һан менән кәсерҙән торған һандар. **Ҡараңғы аралаш** яҡтырыр-яҡтырмаҫтан. *Сөнәғәт менән Хәбибулла иртәгә ҡараңғы аралаш сығып китергә һөйләшеп ҡуйҙы.* Ж. Кейекбаев.

**АРАЛАШСЫ** *и.* Аралашлыҡ иткән кеше.

**АРАЛАШТЫРЫУ** *ҡ.* **1.** Бер нәмәне икенсе нәмә менән ҡатнаштырыу, бергә ҡушыу. *Ҡолдө тупраҡҡа аралаштырып, .. ҡул тырмаһы менән тырматып сыҡтылар, ти* (Әкиәттән).

**2.** Ике нәмәнең араларын бер-береһенә үткәреү. *Соня .. һыҙғанған йыуан беләктәрен өҫтәл өҫтөнә һалып, бармаҡтарын аралаштырҙы.* Б. Ишемғол.

**3.** Бер нәмә менән икенсе нәмәне сиратлаштырыу. *Ял менән эште аралаштырыу.*

**АРАЛАШЫУ** *ҡ.* **1.** Бергә ҡушылып, ҡатнашып буталыу. *Ҡайғыға аралашып ҡайнар йәшем мөлдөрәмә ике күҙҙән ағыр ине.* Ш. Бабич.

**2.** Үҙ-ара бәйләнеш, таныштыҡ тотоу; ҡатнашыу. *Кеше менән аралашыу. Халыҡ менән аралашыу.* /Тел ярҙамында аңлашыу. *Башҡорт теле, башҡа телдәр кеүек үк, аралашыу, үҙ-ара фекер алышыу хеҙмәтен үтәү менән бергә, [ҙур ижтимағи] урын тота.* Ж. Кейекбаев.

**АРАЛЫҠ** *и.* **1.** Бер нәмә менән икенсе нәмә уртаһындағы буш урын; ара. *[Кеүәтов:] Ситән араһында аралыҡ ҡалдырмаҫҡа тырышығыҙ.* Ә. Вәли./Бер нәмәне икенсе нәмәнән айырып торған ара. *[Ауылдар] аралыҡтарында бишалты саҡрым ер ҡалдырып, һыу буйлап теҙелеп киткәндәр.* Ғ. Дәүләтшин.

**2.** Бер ерҙән икенсе ергә тиклем булған алыҫлыҡ. *Зыяның көндәлек маршруты йорттан — мәктәпкә, мәктәптән Ташлыйылғаның ярына тиклем булған аралыҡ ине.* М. Тажи.

**3.** Бер эш-хәлдән икенсеһенә тиклемге ваҡыт өҙөгө. *Эш аралығы.* ■ *Бер нисә секундҡа аңымдан яҙғанмын. Ошо ҡыҫҡа ғына аралыҡта ни булғанын хәтерләмәйем.* Д. Юлтый.

**4.** *диал.* Тыҡрыҡ.

**АРАЛЫҠЛЫ: аралыҡлы культура** киң ара ҡалдырып, аралы итеп сәсә торған культура. *Картуф, сөгөлдөр, көнбағыш — аралыҡлы культуралар.*

**АРАМ** [*ғәр.*] *с.* **1.** *ҡар.* **харам.** *Арам мал. //Арам ашау.*

**2.** *диал.* Яуыз. *Арам уйлы кеше.*

♦ **Арамға сыҡҡыр** ҡарғағанда әйтелә. **Арам тамаҡ** *шул уҡ* **эрәм тамаҡ** (*ҡар.* **эрәм** [2]).

**АРАМДА** *с. ҡар.* **арамъя.**

**АРАМҺА** *с. диал.* Ярамһаҡ.

**АРАМЪЯ** [*фарс.*] *с.* Көс түкмәй, еңел, арлыбирле генә эшләүсән. *Арамъя кеше. //Арамъя эшләү.* ■ *Көндәрең дә илке-һалҡы үтә, бик арамъя ғына эшләйһең.* Б. Вәлит.

● *Наҙан илгә — арамъя мулла.* Әйтем.

**АРАМЪЯЛАНЫУ** *ҡ.* Арамъяға әйләнеү, арамъя булыу.

**АРАМЪЯЛАУ** *ҡ.* Өҫтән-мөҫтән, арлы-бирле эшләү.

**АРАМЪЯЛАШЫУ** *ҡ.* Күңел һалмай, еренә еткермәй, арлы-бирле эшләү.

**АРАМЪЯҺЫҘ** *с.* Хәйләһеҙ, яҡшы итеп эшләүсән. *Арамъяһыҙ кеше. // Арамъяһыҙ эшләү.*

**АРАН** *и.* **1.** Ергә ҡаҙып эшләнгән ваҡ мал торлағы. *[Бүре] төн һайын бер аранға төшөп, һарыҡ-кәзәне ҡырған* (Әкиәттән).

**2.** Һарайҙа айырым бер мал өсөн бүлеп эшләнгән урын.

**3.** *диал.* Мал һарайы.

♦ **Аран ауыҙ** *йәки* **ауыҙы арандай** *ҡар.* **ауыҙ. Арандай асыу** ҙур итеп асыу.

● *Алам тигәндең ауыҙы арандай.* Мәҡәл.

**АРАСЫЛ** *с. диал.* Етәккә шәп, әйәрсән (атҡа ҡарата).

**АРАСЫЛАУ** *ҡ. диал.* Әрсәләү.

**АРАТА** *и.* Ике яҡ таяуға аралы итеп теҙеп ҡуйылған бер нисә ағас. *Баҫҡыс аратаһы. Ҡапҡа аратаһы. Араталы ҡапҡа.* ■ *[Рәхмәт] ҡәртә аратаһына баҫып .., эстә торған атты муйынынан һыйпап һөйҙө, ялдарын тараны.* Ғ. Ғүмәр.

**АРАТАЛАУ** *ҡ.* Араталы итеү. *Ҡапҡаны араталап яһау.*

**АРА-ТИРӘ** [1] *р.* Ваҡыт-ваҡыты менән, һирәкләп. *Урман тып-тын, ара-тирә баш өҫтөнән генә ярғанаттар .. осоп үтеп китә.* М. Тажи. /Унда-һанда, һирәк. *Аҡһырғаҡ, бөргәк, сәнскәк кеүек үләндәр араһында ара-тирә бөрлөгән, ҡарағат кеүек емешле ҡыуаҡтар ҙа күренеп ҡала ине.* Ғ. Дәүләтшин.

● *Ит тураүы табыштыр, ара-тирә ҡабыштыр.* Әйтем.

**АРА-ТИРӘ** [2] *и. йыйн. һөйл.* Ҡатнашып, аралашып йөрөгән туғандар; яҡын кешеләр. *Ара-тирәне саҡырып алаһы бар.*

**АРАУ** *ҡ. иҫк.* Эҙләү. *Аһ, сәсәктәр, былтыр һеҙҙе өҙөп, кемдең ҡукрәгенә ҡаҙаным? Кемгә ҡаҙап, кемгә моңло ҡарап, күҙҙәренән яуап араным?* Ш. Бабич.

**АРАУЫҠ** *и.* **1.** Сикһеҙ-ҡырыйһыҙ киңлек. *Донъя арауығы. Ғаләм арауығы.*

**2.** Тирә-яғы сикле бушлыҡ. *Газдың бөтә булған арауыҡты биләп алыу һәләтлеге бар.*

**3.** (*йәки* **ваҡыт арауығы**) Күпмелер дауам иткән ваҡыт. *Көнһылыуға был бер сәғәт ваҡыт игесиге булмаған арауыҡ кеүек .. тойолдо.* З. Биишева. *Уға [кешегә] йөҙ йылға яҡын ғүмер ҙә керпек ҡаҡҡан арауыҡ кеүек кенә.* Ғ. Хөсәйенов.

**4.** *диал.* Аралыҡ.

**АРА́ХИС** [*рус.* ⟨ *гр.*] *и.* **1.** Ҡуҙаҡлылар ғаиләһенә ҡараған майлы үҫемлек.

**2.** Шул үҫемлектең орлоғо; ҡытай сәтләүеге.

**АРАҺЫНАН** *бәйл. функцияһында* Нимәнеңдер эсенән айырып башҡарылғанды белдергәндә ҡулланыла. *[Әбей] иҫке-моҫҡо нәмәләре араһынан бер яулыҡ алып, яртыһын ҡыҙға йыртып бирҙе* (Әкиәттән).

**АРАҺЫНДА** *бәйл. функцияһында* **1.** Кеше-

ләрҙең үҙ-ара мөнәсәбәтен белдергәндә ҡулланыла. *Халыҡтар араһында дуҫлыҡты үҫтереү.* ■ *Төрлө ырыу, аймаҡ вәкилдәре араһында ғүмер буйы ыҙғыш барған.* Б. Бикбай.

**2.** Кемдең дә булһа ҡаршыһында башҡарылыуҙы белдергәндә ҡулланыла. *Кеше араһында оятҡа ҡалыу.*

**3.** Эш-хәлдең барышындағы айырым-айырым ваҡытты йәки урынды белдергәндә ҡулланыла. *Һүҙ араһында. Дәрес араһында.* ■ *Ул [Тимеркәй] эш араһында ла, тугайға ҡуна барғанда ла үҙе тураһында уйлана.* Д. Юлтый.

♦ **Күҙ менән ҡаш араһында** *ҡар.* **күҙ.**

**АРБА** [*ғәр.*] *и.* Егеп йәки тағып йөрөтә торған тәгәрмәсле ҡорамал. *Ҡыҫҡа арба. Оҙон арба. Тағылма арба. Көймәле арба. Йөк арбаһы. Утын арбаһы.* ■ *Йәйланым да майланым күсәрҙәрен арбаның.* Ш. Бабич. **Балалар арбаһы** *иҫк.* баланы ултыртып, һөйрәп йөрөй торған көймә. **Бәләкәй арба** кеше һөйрәп йөрөй торған ике тәгәрмәсле арба. *Бәләкәй арбаға әйберҙәрҙе тейәп, сәйнүкте билгә тағып, Сәрби еңгәм менән йәйәүләп сығып киттек.* Д. Юлтый. **Инә арбаһы** *ҡар.* **бәләкәй арба. Көлтә арбаһы** бейек үрәсәле оҙон арба. **Ҡул арбаһы** *ҡар.* **бәләкәй арба.** *Иштуған [токтарҙы] ҡул арбаһына тейәп, өйгә алып ҡайтып китә.* З. Биишева. **Ҡуян арба** еңелгә егелә торған ике тәгәрмәсле арба.

♦ **Арба менән ҡуян ҡыуыу** килешмәгән, хилаф эш эшләү. **Атһыҙ арба** *иҫк.* автомобиль. *Молотилканы комбайндар алыштырҙы, атһыҙ арба күҙгә күренә башланы.* «Совет Башҡортостаны», 1967, 20 октябрь. **Ен арбаһы** *һөйл.* Ҡамғаҡ. *Ҡорһаҡһыған ағас мискә кеүек, шыңғырап көн иткән был дала. Тик йөрөгән бында ен арбаһы, үгәйһетеп үткән йылғалар.* Х. Ғиләжев. **Көрөҫ арбаһы** *диал.* көрөҫ сығыры (*ҡар.* **көрөҫ**). **Ни арба, ни сана** яҙғы юл өҙөгө. *Егор ҡарт үлгәс, Александрға телеграмма һуҡтылар. Берҙән, ни арба, ни сана ваҡыты булыу, икенсенән Агиҙел бик ташыу сәбәпле, Александр ҡайта алманы.* Ж. Кейекбаев.

● *Яман арба юл боҙор, яман кеше ил боҙор.* Әйтем. *Ҡабыҡ арба күп шығырлар, ҡарт ҡәйнә күп мығырлар.* Әйтем.

**АРБАҒИ** *и. ҡар.* **робағи.**

**АРБАҘ** *и. диал.* Аҙбар.

**АРБАҠЛАУ** *ҡ. һөйл.* Хөрмәт күрһәтеп маҡтау; күтәрмәләү.

**АРБАҠЛЫ** *с.* Маҡтаулы, хөрмәтле. *Арбаҡлы кеше.*

**АРБАЛЫ** *с.* Арба егелгән. *Арбалы ат.*

● *Арбалы һыбайға юл бирмәҫ.* Әйтем.

**АРБАЛЫУ** *ҡ. төш. ҡар.* **арбау** 1.

**АРБАСЫ** *и.* Арба яһау менән шөғөлләнгән кеше; арба яһаусы.

**АРБАТЫУ** *ҡ. йөкм. ҡар.* **арбау** 1.

**АРБАУ** *ҡ.* **1.** Сихри көс, тылсымлы һүҙ менән тәьҫир итеп үҙеңә буйһондороу. *Йылан арбау.* ■ *[Әбей:] Айыуҙы арбап булмай. Айыуҙы күргәс тә ергә йөҙ түбән һуҙылып ятырға ла ҡуйырға кәрәк.* М. Тажи./Тылсымлы һүҙ, доға менән йылан саҡҡанды дауалау. *Туҙбаш йылан тешләһә, арбап була, ә билдендәп тешләһә, яман була* (Ырымдан).

**2.** *күсм.* Берәүҙе үҙеңә ҡаратыу; аҡыл, күңелен биләп, әүрәтеү. *Зиһенде арбау. Күңелде арбау.* ■ *Тәки был наян Зөһрә, башын-күҙен уйнаҡлата торғас, егетте арбаны бит.* Ф. Иҫәнғолов. *Каруанһарай, йылдар аша балҡып, кешеләрҙең күңелен арбаны.* Р. Бикбаев. /Өгөт, һүҙ менән алдап, нимәгәлер ыңғайлатыу. *Старшина, түрәләр һаман илдә бей булған, халыҡты батша яғына төрлө яҡлап арбаған.* «Юлай менән Салауат».

**АРБАУСЫ** *и.* Арбау (1 мәғ.) менән шөғөлләнгән кеше. *Зәһәр йылан күтәрелеп, ҡарап ҡатҡан арбаусыға.* Н. Нәжми.

**АРБИ́ТР** [*рус.* ⟨ *лат.*] *и.* Ике аралағы бәхәсте хәл итергә саҡырылған кеше; аралашсы. *Арбитрҙар совхоздарҙа ике йөҙҙән артыҡ эште ҡараны.* «Совет Башҡортостаны», 1967, 9 июнь.

**АРБИТРА́Ж** [*рус.* ⟨ *фр.*] *и.* Ике аралағы бәхәстең арбитрҙар тарафынан хәл ителеше. *Халыҡ-ара арбитраж. Дәүләт арбитражы. Арбитраж комиссияһы.* /Төрлө мөлкәт бәхәсен хәл итә торған махсус орган.

**АРБЫ-ТОРБО** *р. диал.* Тарбан-торбан.

**АРГЕНТИН** *и.* Аргентинаның төп халҡын тәшкил иткән милләт һәм шул милләттең бер кешеһе. *Аргентин халҡы. Аргентин ҡатыны.*

**АРГО́** [*рус.* ⟨ *фр.*] *и. лингв.* Айырым бер ижтимағи төркөм кешеләре тарафынан ҡулланылған шартлы тел; жаргон.

**АРГО́Н** [*рус.* ⟨ *гр.*] *и.* Химик элемент, һауа составына ингән еҫһеҙ, төҫһөҙ газ (электр лампаларына тултырыу өсөн ҡулланыла).

**АРГУМЕ́НТ** [*рус.* ⟨ *лат.*] *и.* **1.** *ҡар.* **дәлил.**

**2.** *мат.* Ирекле рәүештә үҙгәрә торған математик дәүмәл.

**АРГУМЕНТЛАУ** *ҡ. ҡар.* **дәлилләү.**

**АРҒЫ** *с.* Алыҫтараҡ булған, арыраҡ торған; киреһе бирге. *Баҡсаның арғы аулаҡ мөйөшөндәге ҡыуаҡтар араһында һандуғас һайрай башланы.* Һ. Дәүләтшина.

♦ **Арғы яҡ** ниҙеңдер ашаһы, теге яғы.

● *Арғы яҡта туй бара тип, бирге яҡта бейемә.* Мәҡәл.

**АРҒЫЛЛАНЫУ** *ҡ.* Уйҡыл-уйҡыл, үрле-түбәнле булыу. *Урал тауҙары арғылланып ята.*

**АРҒЫМАҠ** *и.* Яҡшы тоҡомло йүгерек ат. *Бөркөт күкрәк, тар яңаҡ, баҡыр күҙле, шеш ҡолаҡлы беҙҙең һылыу арғымаҡ.* Ш. Бикҡолов.

● *Арғымаҡ аттың билдәһе — аҙ утлар ҙа күп юшар.* Мәҡәл.

**АРҒЫН** *и. иҫк. ҡар.* **баҫым** [1] 2.

**АРҒЫНЛАНЫУ** *ҡ. ҡар.* **арғылланыу.**

**АРҒЫШ** *и.* **1.** Ҡалынға килгән ҡунаҡтарҙың табынына баш итеп ҡуйылған кеше. *Арғыш ҡуйыу. Арғыш һайлау.*

**2.** Теҙелеп осҡан ҡоштарҙың юл башлаусыһы.

**АРҘА** *и.* **1.** Ике йәшкә тиклем инәһен имгән тай йәки башмаҡ. *Бер-бер генә тауҙар бейек булыр, арҙа ғына менән колья тигән кейек булыр.* «Тәүеш Мәргән».

**2.** *диал. ҡар.* **арҙаҡ** [1].

**3.** *с. мәғ. күсм.* Эшкә булдыҡһыҙ. *[Алламорат:] Уй, арҙа ҡаҙаҡ, аңшайма, эшеңде ҡара!* Һ. Дәүләтшина.

**АРҘАҠ** [1] *и.* Иркә, наҙлы бала.

**АРҘАҠ** [2] *и.* **1.** Хөрмәт, ихтирам.
**2.** *диал.* Йыйнаҡлыҡ, тәртип.

**АРҘАҠЛАНЫУ** *к. төш. кар.* **арҙаҡлау.** *Тамырланып эсә күңелендә, арҙаҡланып ата теләндә, һин торғанда, һалдат, ил һағында имен тормош булыр илемдә.* Н. Иҙелбай.

**АРҘАҠЛАУ** *к.* **1.** Иркәләү, наҙлау. *Кем арҙаҡлап мине, кем йыуатһын?! Ятам! Хәсрәт тулды күңелгә.* Х. Ғәбитов.
**2.** Хөрмәт итеү, ихтирам күрһәтеү. *Егетте арҙаҡлап ҡаршы алалар, аттан төшөрөп, алып инеп китәләр* (Әкиәттән).

**АРҘАҠЛЫ** *с.* **1.** Наҙлы, иркә, ҡәҙерле.— *Эй байғош, берәүҙең арҙаҡлы яңғыҙ ғына балаһы икәнһең, сырағым, әсәң һинең өсөн күҙ йәштәрен түгә торғандыр инде.* И. Көҫәпҡол.
**2.** Хөрмәтле, ихтирамлы. *Арҙаҡлы ир. Арҙаҡлы кеше.*
**3.** *диал.* Йыйнаҡ, тәртипле.
● *Арҙаҡлының балаһы ун биштә лә баш булыр, арҙаҡһыҙҙың балаһы утыҙҙа ла йәш булыр.* Әйтем. *Байға мал арҙаҡлы, ярлыға бала арҙаҡлы.* Әйтем.

**АРЕА́Л** [*рус.* ⟨ *лат.*] *и. зоол., бот.* Билдәле бер үҫемлек йәки йәнлек-хайуан төрөнөң ер йөҙөндә таралған өлкәһе. /*кит.* Берәр төрлө күренештең, ҡаҙылма байлыҡтарҙың һ. б. таралыш өлкәһе.

**АРЕ́НА** [*рус.* ⟨ *лат.*] *и.* **1.** Циркта тамаша күрһәтә торған түңәрәк майҙан. *Аренаға сығыу.* /*күсм.* Берәй хәл-ваҡиға барған урын. *Бик ҡаты урам һуғышы башланды .. һәр бер урам, һәр бер тыҡрыҡ, һәр бер өй көрәш аренаһына әйләнде.* Ә. Ихсан.
**2.** *күсм.* Эшмәкәрлек өлкәһе. *Политик арена.* ■ *Халыҡ-ара аренала ла яҡшы яҡҡа һынылыш кәрәк. Советтар Союзы халыҡтары, бөтә донъя халыҡтары шуны көтә, шуны талап итә.* «Совет Башҡортостаны», 1986, 16 ғинуар.

**АРЕ́НДА** [*рус.* ⟨ *пол.*] *и.* **1.** Ер, йорт йәки башҡа нәмәнең договор буйынса ваҡытлыса файҙаланышы. *Арендаға алыу. Арендаға биреү.*
**2.** Ваҡытлыса файҙаланған өсөн түләнгән хаҡ. *Аренда аксаһы. Аренда түләү.*

**АРЕНДАЛАНЫУ** *к. төш. кар.* **арендалау.**

**АРЕНДАЛАУ** *к.* Арендаға алыу. *Ер арендалау. Клуб арендалау.*

**АРЕНДА́ТОР** [*рус.*] *и.* Ниҙелер арендаға алған кеше.

**АРЕО́МЕТР** [*рус.* ⟨ *гр.*] *и.* Шыйыҡлыҡтарҙың ҡуйылығын билдәләй торған прибор.

**АРЕ́СТ** [*рус.* ⟨ *нем.*] *и.* **1.** Кешенең иректән мәхрүм ителеп, һаҡ аҫтына алыныуы, ҡулға алыныуы. *Арестҡа алыу.* ■ *Кабинетҡа инеү менән Ҡапҡаев, үҙенең ни өсөн килгәнен белдереп, мандаттарын күрһәтеп, миңә арест иғлан итте.* Ш. Хоҙайбирҙин.
**2.** Ниндәйҙер ғәйеп өсөн судтың ҡулдағы мал-мөлкәтте файҙаланыуҙан тыйыуы. *Арест һалыу.*

**АРЕСТА́НТ** [*рус.*] *и.* Иркенән мәхрүм ителеп ҡулға алынған кеше.

**АРҘ** [*ғәр.*] *и. иҫк. кит.* Ер. *Арҙы ҡыпсаҡта хайуандар өсөн мәргәсе [көтөүлек], ут [үлән], бесән йәй ҙә, ҡыш та бик күп.* «Башҡорт шәжәрәләре», 1960.

**АРЗАН** [*фарс.*] *с.* **1.** Хаҡы билдәле бер кимәлдән түбән; осһоҙ; *киреһе* ҡиммәт. *Арзан тауар. Арзан мал. // Арзанға һатыу.* ■ *Спекулянттар уҙармандан сабышып йөрөп игенде арзан хаҡҡа алалар ҙа .. әллә ни тиклем файҙа менән һатып ебәрәләр.* Ғ. Дәүләтшин. **Арзанға төшөү** арзан хаҡҡа килеү. *[Газ] утын менән күмергә ҡарағанда арзанға төшә.*
**2.** *күсм.* Баһаһы түбән, ҡәҙерһеҙ. *Арзан һүҙ. Арзан хәбәр.* ■ *Бар ине арзан заман, сәйран заман, хайран заман.* Ш. Бабич.
● *Арзандың тоҙлого татымаҫ.* Мәҡәл. *Ауылға килгән бөҙ арзан, ауыҙға килгән һүҙ арзан.* Мәҡәл.

**АРЗАНАЙТЫЛЫУ** *к. төш. кар.* **арзанайтыу.**

**АРЗАНАЙТЫУ** *к.* Ниҙеңдер хаҡын кәметеү, арзаныраҡ итеү. *Емеш-йәшелсәгә хаҡты арзанайтыу.*

**АРЗАНАЙЫУ** *к.* Ниҙең дә булһа хаҡы түбәнәйеү, кәмеү, арзанланыу. *[Өйрәнсек:] Көршәктәр хәҙер арзанайҙы. Күберәк эшләмәһәң, икмәклек тә акса табып булмаясаҡ.* З. Биишева.

**АРЗАНЛАНЫУ** *к. кар.* **арзанайыу.**

**АРЗАНЛЫ** *с.* Арзан хаҡлы; *киреһе* ҡиммәтле. *Йылҡы малы арзанлы ит, ҡымыҙ бирә бит. Ни өсөн уны бөтөрөргә?* К. Мәргән.

**АРЗАНСЫЛЫҠ** *и.* Һатыу-алыу хаҡтары түбән булған дөйөм хәл, хаҡтарҙың түбәнлеге; *киреһе* ҡиммәтселек.

**АРЗИ** [*ғәр.*] *с. иҫк. кит.* Ергә мөнәсәбәтле, ергә бәйләнешле.

**АРЗУ** [*фарс.*] *и. иҫк. кит.* Теләк. *Бөтә кеше ҡыҙыға, .. балыҡ тотоу арзуһына төшә.* М. Ғафури.
□ **Арзу итеү** теләү. *Ишетә килдем күптән «диңгеҙ» һүҙен, арзу итә инем күрергә.* М. Ғафури.

**АРЗУЛАУ** *к. иҫк. кит.* Теләү. *Арзулап көтөү.*

**АРИО́ЗО** [*рус.* ⟨ *ит.*] *и. муз.* Һүҙ менән ҡатнаш башҡарыла торған бәләкәй лирик ария. *Героиняның шиғри күңел донъяһы, яҡты хыялдары уның беренсе шаршауҙағы ариозоһында уҡ асыла.* З. Исмәғилев.

**АРИСТОКРА́Т** [*рус.* ⟨ *гр.*] *и.* Синфи йәмғиәттәге иң юғары ҡатлам кешеһе; аҡһөйәк.

**АРИСТОКРАТИК** *с.* **1.** Аристократияға мөнәсәбәтле. *Аристократик йәмғиәт. Аристократик ғаилә.*
**2.** Аристократҡа хас; нәзәкәтле, нескә. *Аристократик ғәҙәттәр.*

**АРИСТОКРАТИ́Я** [*рус.* ⟨ *гр.*] *и.* **1.** Синфи йәмғиәттә: хакимлек иткән иҙеүсе синыфтың иң юғары ҡатламы./Ниндәйҙер бер синыфтың йәки ижтимағи төркөмдөң юғары ҡатламы. *Финанс аристократияһы.*
**2.** *тар.* Власть башында хаким синыфтың бер төркөм иң юғары ҡатлам кешеләре торған дәүләт идараһы формаһы.

**АРИТМИ́Я** [*рус.* ⟨ *гр.*] *и. мед.* Йөрәк тибешенең нормаль ритме боҙолоуы.

**АРИФМЕТИК** *с.* Арифметикаға мөнәсәбәтле. *Арифметик ғәмәл.*

**АРИФМЕ́ТИКА** [*рус.* ⟨ *гр.* ] *и.* Математиканың һандарҙың иң ябай сифаттарын һәм дүрт ғәмәлен өйрәнә торған бүлеге.

**АРИФМО́ГРАФ** [*рус.* ⟨ *гр.*] *и.* Арифметик ғәмәлдәрҙе механик юл менән башҡарып (хисаплау) һөҙөмтәһен автоматик рәүештә сығара торған иҫәпләү машинаһы.

**АРИФМО́МЕТР** [*рус.* ⟨*гр.*] *и.* Арифметик ғәмәлдәрҙе сығара торған бәләкәй иҫәпләү приборы.

**А́РИЯ** [*рус.* ⟨ *ит.* ] *и. муз.* Опера, ораторияла бер генә кеше башҡара торған әҫәр; яңғыҙ йыр. *«Салауат Юлаев» операһының Салауат арияһы.*

**А́РКА** [*рус.* ⟨ *гр.*] *и.* **1.** Башын дуғаландырып, ҡапҡа һымаҡ итеп ҡаплаған йорт йәки күпер стенаһының үтә сыҡмалы урыны. *Арҡалы йорт. Арҡалы күпер.*

**2.** Башын дуғаландырып яһаған декоратив ҡапҡа.

**А́РКТИКА** [*рус.* ⟨ *гр.*] *(баш хәреф менән) и.* Ер шарының төньяҡ поляр өлкәһе.

**АРҠА** *и.* **1.** Кеше кәүҙәһенең яурындан билгә тиклем булған һәм хайуандарҙың муйындан ҡойроҡҡа тиклем булған һырты. *Көмөрө арҡа. Арҡа һөйәге. Арҡанан һөйөү.* ■ *Тәндәр ҡыҙып китте, арҡаға йылы ҡояш төштө.* Д. Юлтый. *Ат еләнә арҡа ҡуйып, юлсы ғәмһеҙ ҡарап бара.* М. Кәрим. **Арҡа һабағы** [*йәки* **үҙәге**] арҡаның урта буйы. *Йылы өйҙән тышҡа сығыу менән, арҡа һабағы семерләп, ҡалтыратып алды.* Ф. Иҫәнғолов. *Бер рәт шулай, ҡарлау арҡа үҙәгемә тейеп, һыныма ҡатырҙы.* М. Ғафури.

**2.** Тау һырты. *Тауҙың арҡаһында, таңдың атҡанында моңло йырҙар йырлай аҡ ҡайын.* Р. Ниғмәти. *Ағарыпҡай ятҡан аҡ арҡаға ат юрттырып менһәң, күс була* (Халыҡ йырынан). **Ҡыр арҡа** тау һыртының иң өҫкө ҡырлауы.

**3.** *диал.* Бысаҡтың, салғының һырты.

**4.** 3-сө зат эйәлек һәм у.-в. клш. формаһында килгәндә бәйләүес функцияһында ҡулланыла (*ҡар.* **арҡаһында**).

**5.** У.-в. клш. формаһында килгәндә бәйләүес функцияһында ҡулланыла (*ҡар.* **арҡала**).

◆ **Арҡа биреү** 1) арт менән боролоу. Ә *Ниса һаман Кәмилгә арҡаһын бирәп ултыр[а].* Ә. Вәли; 2) артҡа боролоп ҡасыу, кире боролоу. *Барырмын һәр ваҡыт алға, һуғышта бирмәмен арҡа.* М. Ғафури. **Арҡа йылытыу** эшләмәй тик ятыу. **Арҡанан һөймәҫтәр** берәй эштең яҡшы түгеллеген белдергәндә әйтелә. *[Мырҙағол:] Белгән өҫтөнә әйтмәй йөрөгән өсөн минең дә арҡамдан һөймәҫтәр.* Б. Бикбай. **Арҡаны ныҡҡа терәү** ышаныслы таяныс табыу: — *Анау Моратша бай ҡыҙыулата, ти, шуға ла арҡаһын ныҡҡа терәп һөйләшәләр инде ул [Үмәр].* Һ. Дәүләтшина. **Арҡа таянысы** (*йәки* **терәге**) ышанырҙай, ярҙам итерҙәй кеше. *[Рыҫҡол:] Кемгә бараһың да, кемгә баш ора беләһең? .. Күҙ терәп барырҙай бер арҡа таянысым юҡ.* Б. Бикбай. **Арҡа терәү** эш-ҡылыҡта кемгә йәки нимәгәлер таяныу, кемдең йәки нимәләрҙең ярҙамына ышаныу. **Арҡа тире** *ҡар.* **тир**[1]. **Арҡа һөйәген һындырыу** көсөн, хәлен алыу; ҡабат аяҡҡа баҫмаҫлыҡ итеү.

● *Арҡа — билгә ҡеүәт.* Мәҡәл.

**АРҠАЛА** *бәйл. функцияһында.* Эш-хәлдең үтәлеү-үтәлмәүенә килтергән сәбәпте белдергәндә ҡулланыла. *[Буранбай] бик оҙаҡлап китте. Беҙ шул арҡала ул көн мунсаға ла бара алманыҡ.* Д. Юлтый. *[Атаһы — улына:] Рәхмәт, улым, һинең арҡаңда кеҙле булдым* (Әкиәттән).

**АРҠАЛАНДЫРЫУ** *ҡ.* **1.** Эшттә, ҡылыҡта кемгә йәки нимәгәлер таяндырыу. *Кешене арҡаландырыу.*

**2.** Яҡлап, иркәләтеү; һуйлатыу. *Баланы арҡаландырыу.*

**АРҠАЛАНЫУ** *ҡ.* Эш-ҡылыҡта кемгә йәки нимәгәлер таяныу, ярҙамға ышаныу. *Аҙым һайын арҡаландым Тыуған ергә.* Н. Иҙелбай. *Намыҫлы ирҙәр ҙә юғала, арҡаланыр мал бөтһә.* Ж. Кейекбаев./Кемдеңдер яҡларына, йәберләтмәҫенә ышаныу, ышаныр иркәләнеү. *Әсәһенә арҡаланып өйрәнгән Миҙхәт берәүҙе лә тыңларға теләмәне.* К. Мәргән.

**АРҠАЛАТЫУ** *ҡ.* Ҡул, тел тейҙермәй яҡлау; үҙеңә һыйындырыу, иркәләтеү. *«Шулай арҡалатып яман өйрәтеп бөтәһең!» — тип әсәйем [атайыма] һуҡрана.* Ш. Янбаев.

**АРҠАЛАУ**[1] *ҡ.* Арҡаға аҫыу; йөкмәү. *Ауыр йөктө арҡалаһаң, юл ҡыйын, оҙаҡ була.* С. Кулибай.

**АРҠАЛАУ**[2] *ҡ.* Берәй кешене яҡлау, аралау. *Батырҙың асыуы инде тарҡаланды, баланы ерҙән алып арҡаланы.* «Бабсаҡ менән Күсәк».

**АРҠАЛЫ** *с.* Таяныслы, яҡлаусылы.

● *Аталы бала — арҡалы, инәле бала — иркәле.* Әйтем.

**АРҠАЛЫҠ**[1] *и.* Ҡамыт, дуғаны күтәртеү өсөн ыңғырсаҡ аша тәртәнән-тәртәгә тарттырыла торған бау. *Ҡайыш арҡалыҡ. Сүс арҡалыҡ.* ■ *[Сыуаш] атының арҡалығын төшөрөп, йәш бесәнгә ҡушты.* Ф. Иҫәнғолов.

◆ **Арҡалыҡ буйы** сама менән оҙонлоҡто билдәләү берәмеге. *Бикмырҙа эй киткән, эй киткән, ти, артына әйләнеп ҡараһа, арҡалыҡ буйы ер киткән, ти* (Әкиәттән).

**АРҠАЛЫҠ**[2] *и. диал.* Сәҫкәп.

**АРҠАН**[1] *и.* Йыуан итеп ишелгән оҙон бау. *Оҙон арҡан. Ҡыҫҡа арҡан. Ҡорос арҡан. Ҡыл арҡан. Йүкә арҡан. Арҡан ишеү.* ■ *Фатих сәй эсеп бөтөп, күк бейәһен егеп, санаға баҫырау, һәнәк, тырмаларҙы һалып, арҡан менән бәйләне лә, нығытып кейенергә тип өйгә инде.* Б. Ишемғол.

◆ **Арҡан буйы** сама менән оҙонлоҡто билдәләү берәмеге. *Ҡояш арҡан буйы күтәрелгәс кенә [Тулыбай ағай] урынынан торҙо.* Ғ. Дәүләтшин. **Бил арҡаны** тирмәнең урта тапҡырынан уратып тарттырып ҡуя торған бау; биллек.

● *Бер ҡылдан арҡан ишеп булмай.* Мәҡәл.

**АРҠАН**[2] *р. диал.* Арт менән, һырт менән. *Арҡан тороу.* ■ *Янһары кеткелдәп, көлөп, арҡан әйләнеп ята.* Б. Бикбай.

**АРҠАНЛАНЫУ** *ҡ. төш. ҡар.* **арҡанлау.** *Арҡанланған ат.*

**АРҠАНЛАТЫУ** *ҡ. йөкм. ҡар.* **арҡанлау.**

**АРҠАНЛАУ** *ҡ.* Оҙон арҡанға тағыу (малды). *Һыйыр арҡанлау. Кәзә арҡанлау.* ■ *Шәрәфи болонлоҡҡа атын арҡанланы ла, салғыһын*

*күтәреп .., бойҙай баҫыуына табан [китте].* И. Насыри.

◆ **Арҡанлап тотоу** бәйләп ҡуйған кеүек, кешене эргәһендә ебәрмәй тотоу. **Шылдырып арҡанлау** алдау.

**АРҠАР** *и.* Ҡуҫҡар мөгөҙлө эре тау һарығы.

**АРҠАТАУ** *и.* Солоҡ ҡарағанда төрлө кәрәк нәмәне тартып күтәрә һәм төшөрә торған бау. *Кәрәк-ярактьі аркатау менән тартып алгас, Бикморат солоктоң капкагын асып, сөрөгө менән быҫкыта- быҫкыта бал карарга тотонды.* Н. Мусин.

**АРҠАУ** [1] *к. туҡ.* Арҡыры еп һалыу.— *Укалар менән аркап, ебәктәр менән кайып, нәгешләп, суклы бауҙар тагып, тәмәке янсыгы әҙерлә.* Б. Ишемғол.

**АРҠАУ** [2] *и.* **1.** Туҡымалағы арҡыры еп. *Йөн аркау.*

**2.** *диал.* Мурҙа талы.

**3.** *диал.* Иҙән өрлөгө.

**АРҠАУЛЫҠ** *и. туҡ.* Туҡыманың арҡыры ебе; арҡау. *Әсәйем матур итеп аҫалы балаҫ һуга торгайны. .. Буйлык епте һанай ҙа, төрлө-төрлө төҫкә буялган аркаулыкты уның аша уткәреп ала.* И. Ғиззәтуллин.

**АРҠАҺЫНДА** *бәйл. функцияһында ҡар.* **арҡала.**

● *Бер куй аркаһында мең куй һыу эскән.* Мәҡәл.

**АРҠЫЛЫ** *с. диал. ҡар.* **арҡыры** [1].

**АРҠЫЛЫУ** *к. диал.* Артылыу. *[Иҙеүкәй — Мораҙымга:] Ғәйрәт кунган һының бар, бәхетең китер аркылып.* «Иҙеүкәй менән Мораҙым».

**АРҠЫРЫ** [1] **1.** *р.* Буйға киҫә йүнәлештә. *Аркыры баҫыу. Аркыры бәйләү. Аркыры кыркыу. Аркыры сыгыу. Аркыры һалыу.* ■ *Береһе [бүреләрҙең] юл ситенә ултырган, береһе юлга аркыры төшөп яткан да куҙҙәрен яндырып, Өммәттең хәрәкәтен күҙәтә.* Д. Юлтый./Кемдеңдер барған юлына киҫә йүнәлештә. *Аркыры кайырыу.* ■ *[Бүреләр] юлга аркыры килде лә сыктылар.* М. Тажи. **Арҡыры төшөү** 1) юлға кире, киҫә төшөү. *Бригадир сыгып китәм тигәндә, Фәхри уның юлына аркыры төштө.* Б. Бикбай; 2) *күсм.* риза булмау; ҡаршы төшөү. .. *Сепаратор алайык тигәс, ата-бабай тотмаган нәмәне, тип аркыры төштөң.* Т. Йәнәби. **Киҫә арҡыры** 1) туп-тура арҡыры. *Бер аҙ баргас, [малай] йылганы киҫә аркыры уткән бер юлга барып сыкты.* И. Көҫәпҡол; 2) ныҡ ҡаршы, ҡырҡа ҡаршы. *Уткән һайлауҙа Ныязголдоң старшина булыуына ул [Мораташ] киҫә аркыры төшөп ултырҙы.* Һ. Дәүләтшина.

**2.** *с.* Буйға киҫә ятҡан, буйҙы тура киҫеп үткән. *Аркыры урам. Аркыры юл.* **Арҡыры ағас** нимәгәләр арҡыры ҡуйып беркетелгән ағас./*и. мәг.* Оҙонса нәмәнең ҡыҫҡа яҡ үлсәме; иң.— *Өҫтәлдең аркырыһы бер, буйы ике метр.* **Арҡырыға йәйелеү** артыҡ һимереп, йыуанайып китеү.

◆ **Арҡыры аяҡ** 1) аяғын арҡыры баҫып йөрөгән кеше; 2) әрләү һүҙе. *[Сәхибә:] Карт мулла, оятһыҙ мулла .. көмөрө, аркыры аяк.* Ғ. Хәйри. **Арҡыры кеше** кире, тиҫкәре кеше. **Арҡыры ятҡанды буй алып һалмау** бер ни ҙә эшләмәү; ҡыл да ҡыбырлатмау. *Беҙҙең Гүзәл аркыры ятканды буй алып һалмай. Балалыкка уның эсе бошмай.* З. Биишева. **Бала арҡыры килеү** бала тыуғанда ыңғайы менән килмәй, арҡыры тороу. *[Мәгфүрә:] Бик каты ауырый, балаһы аркыры гына килмәһә ярар ине.* Һ. Дәүләтшина. **Балаһы арҡыры торғоро** ҡарғағанда әйтелә. **Тамағыңа арҡыры торғоро** (*йәки* **торһон**) ҡарағанда әйтелә.

**АРҠЫРЫ** [2] *бәйл.* (*төп. клш. менән*) **1.** Ниҙеңдер бер яғынан икенсе яғына табан булған йүнәлеште белдергәндә ҡулланыла; аша. *Диңгеҙ аркыры. Сокор аркыры.* ■ *Мин тимер юл аркыры сыгып, юлдың канауына яттым.* Д. Юлтый. *Һыу аркыры карайбыҙ, ылауҙары күренә* (Бәйеттән)./Ниҙеңдер үтәһенән сыҡҡан йүнәлеште белдергәндә ҡулланыла; үтә, аша. *Торба стена аркыры үтә. Урман аркыры үткән юл.* ■ *Һыуһылыу әбей .. туктауһыҙ аккан куҙ йәштәре аркыры .. улының йәшкәҙәгән куҙҙәренә караны.* Ғ. Дәүләтшин.

**2.** Тар юл йәки тишектән үткән йүнәлеште белдергәндә ҡулланыла; үтә. *Ишек аркыры. Тәҙрә аркыры. Тыкрык аркыры ауыл ситенә сыктык.*/Ниҙеңдер уртаһынан, нимәгәләр һуғылып үткән йүнәлеште белдергәндә ҡулланыла; аша. *Көньяк-көнбайыш фронтка килгән һалдаттар .. ошо пункт аркыры утә.* Д. Юлтый.

**3.** Эш-хәрәкәттең берәй кеше йәки сара ярҙамында башҡарылғанын белдерә. *Кеше аркыры. Танышлык аркыры.* ■ *Бер шулай хат аркыры кыҙҙар сакырган, кил, тиеп.* Ш. Бабич./Эш-хәлдең ниндәй сәбәптән булғанын белдерә. *[Рәхимә — Айбулатка:] Бынау йылдарҙы һеҙҙең аркыры башланган .. талаштан [агайындың] башы катып йөрөй.* Һ. Дәүләтшина.

**АРҠЫРЫ-БУЙ** **1.** *р.* Киҫешеп үткән ике йүнәлештә. *Аркыры-буй үлсәү. Аркыры-буйга тырматыу.*/*күсм.* Бөтә йүнәлештә; иңләп-буйлап. *Әле мин үҙемдең Башкортостан ерен дә аркыры-буй әйләнеп сыга алганым юк.* С. Кулибай.

**2.** *с.* Киҫешеп үткән ике йүнәлештәге; арҡыс-торҡос. *Аркыры-буй агастар. Сәсеүҙең аркырыбуй ысулы.*

**АРҠЫРЫЛАЙ** *р.* Арҡырыға табан. *Аркырылай һалыу.* ■ *[Сурагол] билгауын сисеп, сыуал алдына аркырылай куйылган агас урҙага эл[де].* Т. Хәйбуллин.

**АРҠЫРЫЛАНЫУ** *к.* Ыңғайға килмәй тиҫкәреләнеү, киреләнеү.

**АРҠЫРЫ-ТОРҠОРО** *с. диал.* Арҡыс-торҡос.

**АРҠЫСАҠ** [1] *и.* Бер-береһенә арҡыры беркетелгән ике ағас йәки башҡа нәмә.

**АРҠЫСАҠ** [2] (*баш хәреф менән*) *и. астр.* Арҡыс-торҡос өсәр йондоҙҙан торған йондоҙлоҡ (ҡыш көнө генә күренә). *Нурия менән Гөлсөм Аркысак йондоҙо .. күтәрелгәнсә йокламаны.* Н. Мусин.

**АРҠЫСАҠ-ТОРҠОСАҠ** *с. ҡар.* **арҡыс-торҡос.** *Аркысак-торкосак, йыйып алһаң, бер косак* (тирмә кирәгәһенә әйтәләр).

**АРҠЫС-ТОРҠОС** *с.* Бер арҡыры, бер буй; бер-береһенә арҡырылаш. *Аркыс-торкос такта. Аркыс-торкос юл.* // *Аркыс-торкос бәйләү. Ар-*

*кыс-торкос һалыу. Арҡыс-торҡос ятыу.* ■ *Аҡтырнаҡ арҡыс-торҡос баҫып, лапаҫ аҫтынан килеп сыҡты.* Х. Ғиләжев.

**АРЛАН** *и.* **1.** Ата енесле эт.

**2.** *диал.* Ата, иркәк.

♦ **Кесе Арлан** экваторҙағы бер йондоҙлоҡ. **Оло Арлан** көньяҡ күк йөҙөндәге бер йондоҙлоҡ.

**АРЛЫ-БИРЛЕ** *с.* **1.** Мөһим булмаған, ваҡ-төйәк. *Арлы-бирле эш.* ■ *Арлы-бирле һүҙгә ышанып, аумаҡайланып йөрөгән байтаҡ эшсе партияның юлын хәҙер тамам аңлаған.* З. Шәрҡи.

**2.** *р. мәғ.* Ашыҡ-бошоҡ, теләһә ҡалай ғына. *Арлы-бирле ашап алыу.* ■ *Арлы-бирле сәй эсәм дә тиҙерәк урынға йығылам.* Д. Юлтый./Еренә еткермәй, булыр-булмаҫ итеп. *Арлы-бирле бәйләү. Арлы-бирле һөртөү. Арлы-бирле эшләү.* ■ *Яҡут кеүек меуаҡиттең ҡәҙерен белеп, үткәрмәгеҙ йәшлек ваҡытын арлы-бирле.* С. Яҡшығолов.

♦ **Арлы-бирле булыу** 1) әҙ генә бер төрлө хәлгә килеү, ниндәй ҙә булһа бер хәл ҡубыу. *[Яланбикә:] Исхаҡ ағайым уны [шымсы Ширәйҙе], арлы-бирле булғанса, бал эсереп иҫертербеҙ, ти.* Һ. Дәүләтшина; 2) бер-бер ауыр, насар хәлгә осрау. *Һаман юҡсы был ағайың, арлы-бирле булып ҡуймаһын.* **Арлы-бирле итеү** ул-был эште эшләштереү. *Улар сусҡаларҙы ашатып, арлы-бирле иткәнсә, кис тә булып китте.* Ә. Зәйнуллин.

**АРМАЙ** *и. иҫк.* **1.** Яза хөкөмөн еренә еткерә торған кеше; палач. *Ҡамсы тотҡан баяр ялсылары армай кеүек ҡарап торғандар.* С. Ҡудаш.

**2.** Ҡамсы язаһы. *Армай һуғыу.*

**АРМАН** [*фарс.*] *и. иҫк.* Ҙур теләк, ынтылыш. *Бәҙекәй һылыу, һинең арманың юҡ, ағай-эне ятты юлыңа* (Халыҡ йырынан).

**АРМАНҺЫҘ** *с.* Көс-хәлдән тайҙырғыс, ауыр. *Арманһыҙ эш. Арманһыҙ булыу. Арманһыҙ итеү.* ■ *Ағайым арып, арманһыҙ булып .. ҡайтып йығылыр ине.* Ғ. Вәлиев.

**АРМА-ТОРМА: арма-торма килтереү** *диал.* пыр туҙҙырыу.— *Бер көн Нурғәли иҫереп килеп кергән. Тәртешкә менән арма-торма килтереп сығарып ебәрҙем.* Р. Солтангәрәев.

**АРМАТУ́РА** [*рус.* ⟨*лат.*] *и. тех.* **1.** Ниндәй ҙә булһа машина йәки ҡоролманың эшен тәьмин итә торған ярҙамсы ҡорамалдар комплекты. *Тәлигә .. арматураларҙы таҙартты, мерниктары нефтте үлсәне.* Т. Арслан.

**2.** Ныҡлыҡ өсөн бетон йәки башҡа нәмәнең эсенә ҡуйып ҡалдырыла торған тимер һөлдә. *Арматураһы нык булһа, бетон сыҙамлы була.*

**АРМАТУРАСЫ** *и.* Арматура эшләй йәки ҡуя торған эшсе. *Арматурасылар бригадаһы.*

**АРМЕ́ЕЦ** *и. иҫк.* Һалдат.

**А́РМИЯ** [*рус.* ⟨*фр.*] *и.* **1.** Дәүләттең барлыҡ ҡораллы көстәре (ҡоро ер, диңгеҙ, һауа); ғәскәр. *Совет Армияһы. Армияға алыныу. Армияға китеү.*

**2.** Хәрби операциялар үткәреү өсөн тәғәйенләнеп, бер нисә корпус йәки дивизиянан төҙөлгән хәрби берәмек. *Беренсе атлы армия. Танк армияһы.*

**3.** Ҡоро ер ғәскәре. *Армия һәм флот.*

**4.** *күсм.* Дөйөм эш-маҡсат менән берләшкән кешеләр төркөмө. *Беҙҙең республика мәктәптәрендә халыҡ уҡытыусыларының ҙур армияһы эшләй.* «Башҡортостан уҡытыусыһы», 1968, № 3.

**АРМЫТ**[1] *и.* Бер урындан башҡа-башҡа киткән тармаҡ. *Тау армыты.* ■ *Болоттарға баш һуҙған армыт-армыт Урал тау* (Ҡобайырҙан)./Бер төйөндән айырылған тармаҡ. *Өс армытлы ҡамсы.* ■ *Биш армытҡайҙарҙан сәсмәү тағып, күпме йөрөрмөн тиң ҡыҙ булып* (Халыҡ йырынан).

**АРМЫТ**[2] *и.* **1.** Гөлйемеш һымаҡтар ғаиләһенә ҡараған аҡ йәки алһыу сәскәле емеш ағасы; груша. *Армыт ағасы. Армыт сәскәһе.*

**2.** Шул ағастың емеше. *Армыт ашау.*

**АРНАЛЫУ** *ҡ. төш. ҡар.* **арнау.**

**АРНАТЫУ** *ҡ. йөкм. ҡар.* **арнау.**

**АРНАУ** *ҡ.* **1.** Берәй нәмәне кемгәлер береү өсөн билдәләү, алдан тәғәйенләү. *[Ныязгол:] Әйткәндәй, хәҙрәт, мин быйыл гөшөргә тип йөҙ бот иген арнап ҡуйғайным.* Һ. Дәүләтшина.

**2.** Берәй нәмәне кемдер йәки ниҙер хөрмәтенә тәғәйенләү; бағышлау. *Аҙнагол ҡайтып китә. Зөлхизә .. һөйгәненә арнап йыр сығара.* З. Биишева.

**3.** Көстө, ваҡытты кемгәлер, нимәгәлер тәғәйен итеү; бағышлау. *Ғүмерем, бергә шатлан халҡың менән, бергә ян һин, бергә көлә бел. Арна барыһын — эшең, көсөң! Һин үҙеңде онот халҡың өсөн.* М. Хәй.

**АРНЫУ** *ҡ. ҡар.* **арыныу.** *Эштән арныу.* ■ *[Әнүәр] йоконан арный алмай, бер аҙ ваҡыт .. сайҡалып, ҡалғып ултырҙы.* С. Кулибай.

**АРОМА́Т** [*рус.* ⟨*гр.*] *и. кит.* Хуш еҫ, тәмле еҫ.

**АРОМАТЛЫ** *с. кит.* Хуш еҫле. *Ароматлы матдә.*

**АРПА**[1] *и.* **1.** Орлоғо ярма, һыра һәм фураж әҙерләүҙә файҙаланыла торған оҙон ҡылсыҡлы ашлыҡ. *Ике ҡырлы арпа. Дүрт ҡырлы арпа.* ■ *Арпа ғына сәсһәң, сәс сиҙәмгә, яҙғы ла ғына монар алмаһын* (Халыҡ йырынан).

**2.** Шул ашлыҡтың орлоғо. *Арпа оно. Арпа ярмаһы.*

**АРПА**[2] *и.* Керпек төбөнә сыға торған эренле шешек. *Арпа сығыу.*

**АРСА** *и.* Ваҡ япраҡлы, алһыу күк сәскәле, көньякта үҫә торған мәңге йәшел ҡыуаҡ.

♦ **Һаҙ арсаһы** һаҙлыҡта йәки ҡарағайлыҡта үҫә торған ваҡ ҡына өс ҡырлы ҡуйы япраҡлы, ал төҫтәге сук сәскәле мәңге йәшел ҡыуаҡ.

**АРСАЛА́У** *ҡ. ҡар.* **әрсәләү.**

**АРСЕНА́Л** [*рус.* ⟨*фр.* ⟨*гәр.*] *и.* **1.** Ҡорал һаҡлай торған ҙур склад. *Ҡала арсеналы.*

**2.** *күсм.* Нимәнеңдер ҙур миҡдары; байлыҡ сығанағы. *Башҡортостан .. үҙе кеүәтле арсенал булып әүерелде: ул фронтҡа нефтен дә, коросон да, игенен дә ..— бөтә нәмәһен дә бирҙе.* «Совет Башҡортостаны», 1966, 9 май.

**АРСЫЙ** *и.* **1.** *тар.* Батша, хан эргәһендәге иң яҡшы һайландыҡ ғәскәр һәм шул ғәскәрҙә хеҙмәт иткән кеше.

**2.** *күсм.* Ҡыҙҙы кейәү йортона оҙата барған кеше. *Ҡыҙ йортҡа төшкәс, артынан килгән*

*арсыйҙарҙы оҙатып калһа, кото кире ата йортона кайта, ти* (Һынамыштан).

**АРҪ** *окш.* Ҡалын тауышлы эт ҡапыл өргәнде белдергән һүҙ. *Арҫ итеү.*

**АРҪ-АРҪ** *окш.* Ҡабат-ҡабат арҫ иткән тауышты белдергән һүҙ. *Арҫ-арҫ өрөү.*

**АРҪЫЛДАУ** *ҡ.* Арҫ-арҫ итеп өрөү. *Арҫылдығы сығыу. Арҫылдап өрөү.*

**АРТ** *и.* **1.** Йөҙгә, күҙгә кире тараф; *кireһе* ал. *Артка карау. Артта калыу. Арт менән боролоу. Арт менән тороу.* ■ *Арттан беҙгә ярҙам килде. Беҙҙең пулемёттар эшкә башланы.* Д. Юлтый./Ниҙеңдер кире яғындағы урын. *Мейес арты. Ситән арты. Һарай арты. Өй арты.* ■ *Шәп тороуҙар бар ине. Ырҙын артында, яланда әйттереүҙәр бар ине.* Ш. Бабич./Ҡайһы бер географик атамалар менән килгәндә, шул урындан ары булған ерҙе белдерә. *Урал арты. Кавказ арты.* ■ *Байкал артының кышы. Һыуык һәм эсе елле көн ине.* Б. Дим.

**2.** Ниҙең дә булһа йөҙөнә ҡаршы өлөшө. *Кәпәстең арты. Китаптың арты. Күлдәктең арты. //Арт күсәр.* ■ *Аттарҙың арт аяҡтары тапкырында күп булып тиҙәк өйөлгән дә, арт һандары үргә күтәрелеп, ал тояҡтары түбән булып [тора].* Б. Ишемғол.

**3.** Төрлө нәмәнең арҡа тераге өсөн эшләнгән ҡулайламаһы. *Сана арты. Ултырғыстың арты.*

**4.** *һөйл.* Кәүҙәнең арҡа яғынан билдән түбәнге өлөшө; ултырыш.

**5.** Бер эш-хәлдең аҙағы, һуңы. *Мәзин телгә бөткән, аҫтыртын бер нәмә ине. Намаҙ арты һайын халыкты колхозға ҡаршы өндәгән, тамуҡ менән ҡурҡытҡан.* Б. Бикбай.

**6.** *күсм.* Эш-ҡылыҡҡа көс, ышаныс бирер нигеҙ. *Капиталистың арты нык булһа, [эшсене] тукмарга тотона.* Д. Юлтый.

**7.** 3-сө зат эйәлек һәм сығ., у.-в. клш. формаһында килгәндә бәйлеүес функцияһында ҡулланыла (*кар.* **артынан, артында**).

♦ **Арт биреү** *шул уҡ* **арҡа биреү** (*ҡар.* **арҡа**). **Арты** (*йәки* **арт яғы) еүеш** эше мөшкөл, хәле насар.— *Судья матур һүҙ һөйләргә бик оҫта, ә үҙенең арт яғы еүеш .. Уның үҙ улын да кисә кулга алгандар.* Х. Зарипов. **Артынан төшөү** 1) эҙәрләп баҫтырыу; 2) ҡыҫымға алыу. *Райком арттарынан төшкәс кенә, [айламаны] ташыта башланылар.* Д. Исламов. **Ашлыҡ арты** иген елгәргәндә ҡалған ҡый. **Ҡулы артына етмәй** ишек-ҡапҡаны янмай киткән кешегә әйтелә. *Магазиндарҙың, ҙур өйҙәрҙең тышкы ишектәре ябылмағанын күргән һайын Ҡотлойов, кулдары арттарына етмәй [тип], ысынлап бошона.* Ә. Вәли.

● *Алдыңда ышаныс булһын, артыңда таяныс булһын.* Әйтем. *Алдашһаң да артын уйла.* Әйтем. *Алтын көҙ арты — һалкын көҙ.* Әйтем.

**АРТАБАН** *р.* **1.** Билдәле бер тәңгәлдән ары; арыға табан. *Былар [егет менән һалдат] хәҙер ике атка икәүләп менеп, артабан китә* (Әкиәттән).

**2.** Билдәле бер мәлдән ары. *Йыйылышты артабан дауам итеү.*/Шунан һуң, шунан ары. *Фатима артабан, барын-юғын төпсөп торманы...* Б. Бикбай. *Теге гифрит ант итте, ти. Әҙәм затына һис бер хас ҡылмам бынан артабан тип әйтте, ти* (Әкиәттән).

♦ **Кит артабан!** 1) кемде йәки ниҙелер яндан ҡыуғанда әйтелә; 2) кемдеңдер һүҙен бушҡа һанағанда әйтелә. *Ҡотлоярҙың ысынлап та иҫе китте: «Кит артабан. Юкты һөйләмә!»* Һ. Дәүләтшина.

**АРТАБАНҒЫ** *с.* **1.** Артабанда торған, ары торған. *Артабангы өй.*

**2.** Киләсәктәгә. *Революция етәксеһенең .. һүҙҙәре Айбулаттарҙың артабангы көрәш юлдарын яктыртып ебәрҙе.* Һ. Дәүләтшина.

**АРТАҠ** *и. иҫк.* Ҡурҡыныс йән эйәһе; йыртҡыс. *Бара-тора .. Кусәк батыр тураһында һөйләүҙәр баҫылған, яман артакка осрап һәләк булгандыр, тип, бөтәһе лә төңөлгән, ти.* «Бабсаҡ менән Күсәк». *[Әсәһе — балага:] Яман күҙҙән һаклаһын, яман артактан һиҫкәнмәй, батыр булып йәшәһен* (Бишек йырынан).

**АРТАУ** *ҡ.* Үтә ның эсеү; ҡырҡыуланыу. *Артаған бал.* ■ *— Икмәгем артап бара, мейес яга һалырга кәрәк.* М. Тажи.

**АРТЕЗИАН** [*рус.* артезианский]: **артезиан ҡоҙоғо** бырауланған ерҙән һыуы бәреп сыҡҡан ҡоҙоҡ.

**АРТЕЛЛӘШЕҮ** *ҡ.* Артелгә ойошоу; берләшеү.

**АРТЕЛЛӘШТЕРЕҮ** *ҡ.* Артелгә ойоштороу; берләштереү.

**АРТЕЛСЕ** *и.* Артель ағзаһы.

**АРТЕ́ЛЬ** [*рус.*] *и.* Уртаҡ эш һәм уртаҡ файҙа нигеҙендә ойошҡан күмәк хужалыҡ. *Ауыл хужалыгы арteле. Артель хужалыгы. Артелгә инеү.*

● *Артелдең өйрәһе ҡуйы була.* Мәҡәл.

**АРТЕРИАЛЬ** [*рус.* артериальный] *с. анат.* Артерияға мөнәсәбәтле. *Артериаль баҫым. Артериаль кан.*

**АРТЕ́РИЯ** [*рус.* ⟨ *гр.*] *и.* **1.** *анат.* Ҡанды йөрәктән тәнгә тарата торған ҡан тамыры. *Артерия каны. Йоко артерияһы.* ■ *Уң яҡ карынсыктан кан артерия буйлап упкәләргә килә.* З. Заһидуллин.

**2.** *күсм.* Бәйләнеш юлы, аралашыу юлы (ғәҙәттә йылғаға ҡарата). *Нил йылгаһының ике ягынан да иҫәпһеҙ-хисапһыҙ күп каналдар — илгә тормош биреүсе артериялар һуҙылып киткән.* З. Хисмәтуллин.

**АРТИ́КЛЬ** [*рус.* ⟨ *лат.*] *и. грам.* Ҡайһы бер телдәрҙәге исемдең билдәлелек-билдәһеҙлек, род һәм һан категорияларын белдерә торған киҫәксә.

**АРТИКУЛЯЦИОН** [*рус.* артикуляционный] *с. лингв.* Артикуляцияға мөнәсәбәтле. *Өндәрҙең артикуляцион үҙгәреше.*

**АРТИКУЛЯ́ЦИЯ** [*рус.* ⟨ *лат.*] *и. лингв.* Телмәр ағзаларының теге йәки был өндө әйткән ваҡыттағы хәрәкәте һәм торошо. *Тартынкы өндәрҙең артикуляцияһында телмәр агзаларының бөтәһе лә актив ҡатнаша.* Ж. Кейекбаев.

**АРТИЛЛЕРИ́СТ** [*рус.*] *и.* Артиллерияла хеҙмәт иткән хәрби кеше. *Артиллерист Фролов башта бер нисә граната ебәрҙе, унан һуң пераппелдән ата башланы.* А. Таһиров.

**АРТИЛЛЕ́РИЯ** [*рус.* ⟨ *фр.*] *и.* **1.** *йыйн.* Төрлө калибр һәм төҙөлөштәге орудиелар; туптар. *Зенит артиллерияһы. Үҙе йөрөмәле артиллерия.*

*Артиллерия атышы. Артиллерия паркы.* ■ *Ике яктан да артиллерия атышы башланды.* Д. Юлтый.

**2.** Туптар менән коралланған ғәскәр төрө. *Артиллерияла хеҙмәт итеү.*

**АРТИСЛАНЫУ** *к. һөйл.* Яһалма кыланыу. *Миңлекәй бысрак күңелен артисланып йәшереп йөрөргә күнеккән.* М. Минһажетдинов.

**АРТИСТ** [*рус.* ⟨ *фр.*] *и.* **1.** Сәнғәт әҫәрен тамашасылар алдында башкарыусы. *Атказанған артист. Танылған артист. Опера артисы. Эстрада артисы.*

**2.** *күсм. һөйл.* Яһалма кыланыусы кеше.

**АРТИСТИК** *с.* Артиска хас. *Артистик оҫталык.*

**АРТИСТКА** [*рус.*] *и.* Артист катын. *Башкорт АССР-ның атказан артисткаһы.*

**АРТКА** *р.* **1.** (*йәки* **артка табан, кире артка**) Арт якка табан. *Артка китеү. Артка сигеү.* ■ *Әмирханов урынынан калка биреп, артка караны.* С. Агиш./Арт якка. *Кулды артка куйыу.* ■ *Шакир ат кыуа, Шәрәф артка ултырған.* Б. Бикбай.

**2.** Арткы якта; артта. *Алға барабыҙ. Бик күп ғәскәр[ҙе] артка калдырабыҙ.* Д. Юлтый.

◆ **Артка китеү** кирегә, насарға китеү. *Эштәр артка китә башланы.* **Артка калыу** эш-хеҙмәт һөҙөмтәһе яғынан кемдәндер калышыу. **Артка куйыу** нык әһәмиәт бирмәй, икенсе урынға куйыу. **Үксәң артка киткән** *кар.* **үксә.**

● *Бер көнгә артка калһаң, биш көндә етә алмаҫһың.* Мәкәл.

**АРТКЫ** *с.* Арт якта урынлашкан. *Арткы ишек. Арткы урам. Арткы юл.* ■ *Һүҙ һораусы арткы рәттән ине.* Ғ. Сәләм.

● *Алғы тәгәрмәс кайҙан тәгәрләһә, арткы тәгәрмәс тә шунан тәгәрләй.* Мәкәл.

**АРТЛАП** *р.* Арт яклап. *Кәртә артлап китеү.* ■ *Бына китә баҫыуға бер нисә отряд бергә. Фәниә лә был вакыт бакса артлап йүгерә.* Ф. Рәхимғолова.

**АРТЛЫ** [1] *с.* Арт (3 мәғ.) куйып яһалған, арты бар. *Артлы ултырғыс. Артлы сана.*

**АРТЛЫ** [2]: **бер-бер артлы** берейһе артынан икенсеһе. *Көндәр юрта шулай бер-бер артлы, асылаябыла гүмер капкаһы.* Ғ. Амантай.

**АРТМА** *с. кар.* **артмалы.**

**АРТМАК** *и.* **1.** Эйәргә ике яклап аҫыла торған куш моксай (күн, көйөҙ, балаҫ һымак нәмәнән тегелә). *Артмак аҫыу.*/Эш хайуанына артылған йөк.

**2.** Аркаға аҫа торған юл тоғо. *Сөнәгәт аркаһындағы артмағын йәтешләп алды ла ысык ярып артабан атла[ны].* Ж. Кейекбаев.

**3.** *диал.* Башағас.

**АРТМАКЛАУ** *к.* **1.** Токто элмәкләп аркаға аҫыу. *[Фуат ағай] ун дүрт-ун биш йәшендә үк, аркаһына токсай артмаклап, тыуған ауылын ташлап сығып китә.* Н. Мусин.

**2.** *кар.* **артыу** [2].

**АРТМАК-ШАРТМАК** *с. диал.* Аркыс-торкос.

**АРТМАЛЫ** *с.* Артып ебәрмәле. *Артмалы ток.*

**АРТМЫШ** *и. диал.* Килмешәк.

**АРТРИТ** [*рус.* ⟨ *гр.*] *и. мед.* Быуын шеше.

**АРТТА** *р.* **1.** Арткы якта. *Заятүләк артта өҙләкһеҙ йылкы кешнәүен, иҫәпһеҙ тояк сыкылдауын, Асылыкүл һыуының шаптырлауын ишетә.* «Заятүләк менән Һыуһылыу». *Биктимерҙең аты арып артта кала* (Әкиәттән).

**2.** Үтеп киткән заманда. *Бына хәҙер артта бары ла: һыулы окоп, үлем шәүләһе.* Ә. Вәли.

**3.** *күсм.* Эш һөҙөмтәһе, тормош кимәле яғынан кемдәндер кәм, түбән. *Артта булыу. Артта барыу.*

**АРТТАН** *р.* **1.** Арткы яктан. *Арттан кемдер кыскырҙы. Януҙак карт тауыш килгән якка боролоп караны.* М. Тажи.

**2.** Ниҙең дә булһа һуңынан; аҙак.

**3.** *бәйл. функцияһында* Эйәлек килешендәге зат алмаштары менән килеп кемдер аркыры берәй нәмә тапшырыуҙы, ебәреүҙе белдерә. *Хатты һинең арттан ебәрәм.*

● *Аҫыу алдан йөрөр, акыл арттан йөрөр.* Мәкәл.

**АРТТЫРЫЛЫУ** *к. төш. кар.* **арттырыу** 1.

**АРТТЫРЫУ** *к.* **1.** Берәй нәмәнең күләмен, һанын күбәйтеү. *Ашлама сығарыуҙы арттырыу. Һөт һауып алыуҙы арттырыу.*/Өҫтәү, кушыу.— *Кола бейә китте. Бынау Коток ағай арттырманы бит, ахыры 95 һумға һаттым.* Т. Йәнәби./Көсәйтеү. *Зөлхизәнең әсәһе хакындағы дөрөҫлөктө Аҙнағолдоң ошоғаса белмәй йөрөүе лә Юламан карттың шиген арттыра.* З. Биишева.

**2.** Булмағанды үҙеңдән өҫтәү; шаштырыу. *Арттырып һөйләү.* ■ *[Фәйрүзә:] Арттыраһың, Морат, мактанаһың. Бушка мактаныу кешене күтәрмәй ул.* К. Даян.

**3.** Бүлеп, өлөш сығарыу. *Үҙеңдән арттырып биреү.*

**4.** Бер һанды икенсе һан иҫәбенә күбәйтеү; кабатлау. *Бишне икегә арттырыу.*

● *Эшле килер — эш арттырыр, эшһеҙ килер — эш калдырыр.* Мәкәл.

**АРТЫК** [1] *с.* **1.** Кәрәктән тыш; артып калған. *Артык мал. Артык эш. Артык кейем.* ■ *Фронтка икмәк кәрәк, калала эшселәр асыға. Бында артык иген бушка сереп ята.* Һ. Дәүләтшина. *Акык кына кеүек һатып бирҙең, артык кына инемме, атакайым?* (Сеңләүҙән).

**2.** *күсм.* Тейешһеҙ, урынһыҙ. Артык һүҙ. *Артык хәбәр.*

**3.** *р. мәғ.* Билдәле бер һандан, дәүмәлдән күп. *Колхозда меңдән артык кеше бар.*

**4.** *р. мәғ.* Саманан күп, сиктән тыш; бик, үтә. *Артык борсолоу. Артык мактаныу. Артык һөйләнеү. Артык оло. Артык оҙон. Артык күп.* ■ *Быйылғы кыш артык буранлы булмаһа ла, сатнама һыуыктар күп булды.* Ғ. Дәүләтшин. *Һары ла ғына була һандуғас, өҙөлә йөрәк артык һағынғас* (Халык йырынан).

**5.** *р. мәғ.* Өҫтөн, юғары. *[Тимер] ысын комсомолец, колхозды үҙ йәненән дә артык күрә.* Б. Бикбай./*хәб. функцияһында* Якшырак, һәйбәтерәк. *Мең йыл тынып-тонсоғоп йәшәгәнсә, бер көн янып-ярһып, урғып-кайнап йәшәү артык!* З. Биишева.

◆ **Артык бүрәнә башы** *кар.* **бүрәнә. Биш артык** бер нәмәне йәки хәлде икенсе нәмәнән якшырак күргәндә әйтелә. *[Нигмәтулла:] Уның урыңына*

*үҙебеҙҙең кешене куйһалар, биш артык булыр ине.* Я. Хамматов.

● *Артык ашкынған ашһыҙ калыр, башын йәшергән башһыҙ калыр.* Мәҡәл. *Ауырткан ер — артык ер.* Әйтем. *Дөйә һуйған йыйындан тәкә һуйған туй артык; тауыш тыуған туйындан тыныс торған өй артык.* Әйтем.

**АРТЫҠ-БОРТОҠ** *с.* Кәрәге булмаған, артык һаналған. *Артык-борток кеше.* ■ *[Мәғфурә:] Ярар алайһа. Артык-борток аксанды йыя бар. Юкка туҙҙырма.* Һ. Дәүләтшина./Тейешһеҙ. *Һин, туған, артык-бортоғон газетала шаяртып куйма тағы.* *Ф. Иҫәнғолов.*

**АРТЫҠЛЫҠ** *и.* **1.** Билдәле бер һандан, кимәл-дәүмәлдән күп булғанлыҡ. *Балалар күмәк булһа ла, артыклығы һиҙелмәй.*

**2.** Кемдән йәки ниҙәндер яҡшыраҡ сифат. *Кешенән артыклығы юк.*

◈ **Артыҡлыҡ дәрәжәһе** *грам.* төп сифат һәм рәүештең иң юғары дәрәжәһен күрһәткән грамматик категория.

**АРТЫҠҺЫНЫУ** *к.* Берәй кешене артыҡ күреү, артыҡҡа һанау.

**АРТЫЛДЫРЫУ** *к.* Һауыттың өҫтөнән арттырыу; таштырыу. *[Әсәһе — Сәүиәгә:] Шәшкеңде ул кәҙәр артылдырма. Тулыр-тулмаҫ кына булһа, йәмле лә, тәмле лә була ул.* Ф. Иҫәнғолов.

**АРТЫЛЫУ** [1] *к.* **1.** Тулып ташып сығыу; ашыу. *[Гөлбикә — Таңсулпанға:] Бар, каҙан аҫтыңды кара. Кайнап артылып китмәһен.* Д. Юлтый. *Артылып аккан һыуҙар ҙур йылғаға кушылдылар.* Ш. Бабич.

**2.** Күтәрелеп, аша сығыу (тауҙы). *[Һыбайлы] калын кара урманлы тауҙы артылып, тигеҙ яланға сык[ты].* Ә. Ихсан. *Ҡояш әкрен генә, арыған кеүек, байып китте тауҙан артылып.* Х. Ғәбитов.

**3.** Инә малға ҡапланыу.

**АРТЫЛЫУ** [2] *к. төш. кар.* **артыу** [2]. *Аттар әйәрләнә, һауыт-һаба ат өҫтөнә артыла* (Әкиәттән).

**АРТЫЛЫШ** *и.* Тау һыртының аша сығып йөрөрлөк, һөҙәгерәк урыны. *Артылыштан артылғанда бер караным артыма* (Халыҡ йырынан).

**АРТЫМ** *и.* **1.** Ниҙеңдер үҙ иҫәбенә арткан ауырлығы. *Артым алыу.* ■ *Бүлексәлә башмактарҙың көндәлек артымы 600 грамдан аша.* «Совет Башҡортостаны», 1987, 21 февраль.

**2.** Өҫтәмә үҫеш. *Хужалыктың артымы иҫәбенә файҙа алыу.*

**АРТЫМЛЫ** *с.* Күп артым (1 мәғ.) бирә торған. *Артымлы он.*

**АРТЫНАН** *бәйл. функцияһында (төп клш. менән)* **1.** Алыҫлаша барыусыға эйәрә барыуҙы белдергәндә ҡулланыла. *Дошман артынан кыуыу. Әсәһе артынан барыу. Лекция артынан фильм күрһәттеләр.*

**2.** Бер эш-хәлде икенсеһе алыштырыуҙы белдергәндә ҡулланыла. *Бесән артынан урак башланды. Сәләм артынан сәләм. Һүҙ артынан һүҙ сығыу.*

**3.** Берәй кеше аша башҡарылыуҙы, ниҙер ебәреүҙе белдергәндә ҡулланыла. *Атай артынан хәбәр ебәреү.* ■ *Осоп барған кош артынан әйтегеҙ беҙгә сәләм* (Халыҡ йырынан).

**АРТЫНДА** *бәйл. функцияһында (төп клш. менән)* Кеше үҙе булмағанда уға ҡарата ниҙер ҡылыуҙы белдергәндә әйтелә. *Кешене артында һөйләү.*

● *Дуҫ күҙеңә карап әйтер, дошман артында ғәйбәт һатыр.* Әйтем.

**АРТЫНСА** *р.* Артынан уҡ, эҙенән үк. *Әле генә йәшенле ямғыр уҙған. Уның артынса кояш балкып сыккан.* З. Биишева.

**АРТЫНЫУ** *к.* **1.** Үҙеңә йәки менгән атыңа күп итеп артыу (йөктө). *Артынып китеп бара.*

**2.** Үгеҙ теләп, мал өҫтөнә һикереү (һыйырға ҡарата).

**АРТЫУ** [1] *к.* **1.** Һан, күләм яғынан үҫеү; күбәйеү, ишәйеү. *Көс арта. Мөлкәт арта. Эш арта.* ■ *Һәр йыл сәскә арта баксала.* Ғ. Сәләм./Өҫтәлеү. *[Фәхри:] һөйөнсө, тағы бер колхозсы артты.* Б. Бикбай./Кимәл яғынан үҫеү йәки күтәрелеү. *[Сәмрегош:] Йылғаның бынау тәңгәлендә һыу кисәгегә карағанда артып тора* (Әкиәттән)./Билдәле бер сикте үтеү (ваҡытҡа ҡарата). *Хәҙер Юлияның бында килеп эшләй башлауына инде йылдан артты.* Һ. Дәүләтшина.

**2.** Кәрәктән, саманан артыҡ булыу. *[Көтөүсе карт:] Беҙҙең Күсәр хандан кеше артмаҫ* (Әкиәттән).

**3.** Көс-кеүәт алып, шәбәйеү; көсәйеү, үҫеү. *Йә тағы, Зариф Мозаффар, ватмаймы бик милләтең? Ватһа ватһын милләтең, хеҙмәткә артһын һимmәтең.* Ш. Бабич. *Һөйгән йәрең матур булһа, гишык артыр көн һайын* (Халыҡ йырынан).

**4.** Мөлкәт йыйып хәлләнеү; байыу. *[Миңһылыу:] Күпме серәнһәк тә беҙ артманыҡ, ә Исхак калынайҙы.* К. Кинйәбулатова.

● *Ата-инә кәҙерен белгәндең ырыҫы артыр.* Мәҡәл. *Бер тиренән тун да тек, мул да тек, бер бейәләйлек артып та калһын.* Әйтем. *Иттең тәмлеһе — карта, ашаған һайын арта.* Әйтем. *Тауҙан таш артмаҫ, байҙан эш артмаҫ.* Мәҡәл.

**АРТЫУ** [2] *к.* Ике яҡҡа һалындырып, эш хайуанына йөк аҫыу, артмаҡлау. *Ул [Арғынбай] дөйәһенә Аҡмәғәмбәт тигән байҙың мал тиреләрен арткан да, калаға алып бара.* С. Агиш.

**АРТЫУ** [3] *к.* Эс-ҡарындан аралап алыу (ас эсәкте).

**АРТЫУ** [4] *и. кар.* **артылыш.** *Һәр артыуҙың артында һаркыу бар, һаркылғанда һарыу кайната.* Т. Йәнәби.

**АРТЫШ** *и.* Кипарис һымаҡтар ғаиләһенә ҡараған, мәңге йәшел ылыҫлы ҡыуаҡ йәки ағас (емеше медицинала ҡулланыла). *Ябай артыш. Ҡаҙаҡ артышы. Себер артышы. Артыш майы. Артыш төтәтеү.* ■ *Ҡыраз таш аралап артыш үҫкән, сәс һелкетә ялбыр селектәр.* А. Игебаев.

**АРУҠ** *р. кыҫк. фр. һөйл.* Арыу уҡ.— *Бына йөҙ имәндең юлы шул ул, улым,— тип һүҙен бөтөрҙө Әхмәҙулла бабай, инде аруҡ үҫеп буйһыу булып ултырған йәш урманына карап.* Ә. Вахитов.

**А́РФА** [*рус.* ⟨ *нем.*] *и.* Ҙур өсмөйөш рәүешендәге сиртеп уйнай торған ҡыллы музыка ҡоралы. *Арфала уйнау. Арфа һәм ҡыллы оркестр өсөн яҙылған әҫәр.*

**АРХАИ́ЗМ** [*рус.* ⟨ *гр.*] *и.* Иҫкергән һүҙ, һүҙ бәйләнеше йәки грамматик форма.

**АРХАИК** *с.* Боронғо, иҫкергән. *Архаик һүҙ. Архаик форма.*

**АРХАИСТИК** *с.* Боронғо формаға оҡшатылған (әҙәбиәт, сәнғәт әҫәрҙәренә ҡарата).

**АРХА́Р** [*рус.*] *и. кар.* **арҡар.**

**АРХЕО́ГРАФ** [*рус.*] *и.* Археография буйынса белгес.

**АРХЕОГРАФИК** *с.* Археографияға мөнәсәбәтле. *Археографик ҡомартҡы.*

**АРХЕОГРА́ФИЯ** [*рус.* ⟨ *гр.*] *и.* Боронғо яҙма ҡомартҡыларҙы йыйыу, өйрәнеү һәм баҫырға әҙерләү менән шөғөлләнә торған ярҙамсы тарих фәне.

**АРХЕО́ЛОГ** [*рус.* ⟨ *гр.*] *и.* Археология буйынса белгес.

**АРХЕОЛОҒИК** *с.* Археологияға мөнәсәбәтле. *Археологик ҡомартҡы.*

**АРХЕОЛО́ГИЯ** [*рус.* ⟨ *гр.*] *и.* Кешелек йәмғиәтенең үткәнен һаҡланып ҡалған матди ҡомартҡылар буйынса өйрәнә торған фән. *Археология институты.*

**АРХИ́В** [*рус.* ⟨ *лат.*] *и.* **1.** Яҙма ҡомартҡыларҙы, тарихи документтарҙы тәртипкә килтереү һәм һаҡлау менән шөғөлләнгән махсус учреждение. *Дәүләт архивы.*

**2.** Учреждениеның, ойошманың иҫке документтар, тамамланған эш ҡағыҙҙары һаҡлана торған бүлеге.

**3.** Айырым ойошма йәки кешенең эшмәкәрлегенә бәйле ҡағыҙҙар. *Шәхси архив. Партия архивы.*

**АРХИВА́РИУС** [*рус.* ⟨ *нем.*] *и.* Архив хеҙмәткәре.

**АРХИЕРЕ́Й** [*рус.* ⟨ *гр.*] *и.* Христиан динендә юғары дәрәжәләге руханиҙарҙың (епископ, архиепископ, митрополит) дөйөм атамаһы.

**АРХИМАНДРИ́Т** [*рус.* ⟨ *гр.*] *и.* Манастырь башлығы титулы, шулай уҡ монахтарҙың иң юғары исеме.

**АРХИПЕЛА́Г** [*рус.* ⟨ *гр.*] *и.* Бер-беренә яҡын урынлашҡан утрауҙар төркөмө. *Соломон архипелагы ете эре һәм йөҙләгән ваҡ ҡына утрауҙан тора.*

**АРХИТЕКТО́НИКА** [*рус.* ⟨ *гр.*] *и. архит.* Өлөштәрҙең үҙ-ара гармоник ярашып, төҙөк бер бөтөн тәшкил итеүе./*сәнғ.* Әҫәр төҙөлөшөндәге үҙ-ара тап килеүсәнлек; композиция.

**АРХИТЕ́КТОР** [*рус.* ⟨ *лат.*] *и.* Архитектура өлкәһендәге белгес. *Архитектор икән, ашығып бара эш урынына тиҙерәк етергә, үҙе Иҙелдәге бер төҙөлөштөң корпус проектын тикшерә.* Ғ. Сәләм.

**АРХИТЕКТУ́РА** [*рус.* ⟨ *лат.*] *и.* Йорт, бинаны проектлаштырыу, төҙөү һәм биҙәү сәнғәте. *Архитектура институты. Архитектура ҡомартҡылары.* / Биналарҙы, ҡоролмаларҙы төҙөү стиле. *Готик архитектура. Роман архитектураһы.*

**АРШЫН** *и. иҫк.* **1.** Метр системаһын ҡабул иткәнгә тиклем, рустарҙа ҡулланылған оҙонлоҡ үлсәү берәмеге (71,1 сантиметрға тигеҙ). *Ун аршын ситса.*

**2.** Шул оҙонлоҡтағы үлсәү таяғы.

◆ **Үҙ аршының менән үлсәү** *кар.* **үлсәү** [1].

● *Һәр кемдең үҙ аршыны бар.* Әйтем.

**АРШЫНЛАУ** *к. һөйл.* Аршынға һалыу. *Аршынлап үлсәү. Аршынлап бүлеү. Аршынлап өләшеү.*

**АРШЫНЛЫ** *с. һөйл.* Аршын менән үлсәнгән. *Аршынлы тауар.*

**АРЬЕРГА́РД** [*рус.* ⟨ *фр.*] *и.* Ғәскәрҙең һәм флоттың сигенгән йәки тылға күскән ваҡытында һаҡлыҡ өсөн артта ҡалдырылған төркөм. *Икенсе көнө походта беҙҙең ротаның яртыһы авангардка, яртыһы арьергардка эләкте.* А. Таһиров.

**АРЪЯҠ** *и.* **1.** Ҡаршы яҡтағы яҡ, *киреһе* бирьяҡ. // *Аръяҡ урам.* ■ *Яңғыҙ торған йомро кәмәне .. һыуға тартып төшөрөп, аръяҡҡа сыҡтым.* Ә. Вахитов. *Аръяҡ алыҫ. Әйләнергә бирьяҡ та алыҫ ҡала. Киләм йылға уртаһында, йәш боҙ ғына сайҡала.* Р. Бикбаев.

**2.** Нимәнең дә булһа артындараҡ ятҡан урын, ер. *Ҡояш та бер тауҙың артынан күтәрелә лә, әллә ни арала икенсе тауҙың аръяғына төшөп китә.* М. Тажи./*күсм.* Ниндәйҙер урын, дәрәжәнән өҫтөнөрәк ер. *Кемдер берәү мәсхәрәләп: «Секретарҙың аръяғына барһаң да беҙ үҙебеҙҙекен итербеҙ»,— тип ҡысҡырҙы.* Б. Ишемғол.

**3.** Эш-хәлдең артабаны.— *Ярай, ҡустым, мин былай ғына әйтәм, аръяғын үҙең беләһең инде, һин хужа кеше,— тине Яҡуп.* Б. Бикбай.

**АРЫ** *р.* **1.** Билдәле бер тәңгәлде үтеп; артабан. *Сынбулатов, Сәғиҙә менән хушлашып, ары китте.* М. Тажи.

**2.** Билдәле бер мәлдән һуң; йәнә, тағы. *Саҡай, ауыл мәҙрәсәһен бөтөргәс, өйләнеп, хужалыҡ эштәренә бәйләнеп китте, ары уҡыманы.* Б. Бикбай.

**3.** Билдәле бер кимәлдән юғары; артыҡ. *Был һауытҡа ике литрҙан ары һыймай.*

◆ **Ары торһон** кәрәкмәй, кәрәге юҡ. **Ары бәрелеп, бире һуғылыу** ҡаңғырып йөрөү, ни эшләргә белмәү. *Бахыр Аҡназар ары бәрелә, бире һуғыла — бер ҙә эш сыҡмай* (Әкиәттән).

● *Татыу булһа ҡатының, ары торһон алтының.* Әйтем.

**АРЫ-БИРЕ** *р.* **1.** Бер тегеләй, бер былай. *Зилский үҙенең Өмөтбайға ҡаршы булған дошманлығын эсенә һыйҙыра алмай, ары-бире йөрөнө.* Ғ. Дәүләтшин.

**2.** *с. мәғ.* Теге-был, төрлө. *Ары-бире кеше. Ары-бире эш.*

◆ **Ары-бире булыу** берәй хәл килеп сығыу. *Бураншә йәштәргә хас ғәмһеҙлек менән көлә: «Атай, әлдә өйҙә һин ҡалаһың әле. Ары-бире булып, беҙ ваҡытында ҡайта алмаһаҡ, ҡатын, бала-сағаны йыуатырға кеше бар».* З. Биишева. **Ары-бире итеү** ваҡ-төйәк эш башҡарыу.

**АРЫҒАЙЫУ** *к. кар.* **арыҡланыу.**

**АРЫЙ** *р. диал.* Өҙөк-өҙөк бер нисә тапҡыр. *Ике арый яуҙы ямғыр.*

**АРЫҠ** [1] *и.* Урта Азияла, Ҡаҙағстанда, Кавказ артында: ер һуғарыу өсөн ҡаҙылған канау. *Арыҡтарҙа тамам һыу кипте, әсә кукрәгенән һөт китте.* М. Кәрим. *Һыуҙар аға арыҡтан да ҡыҙҙар ҡарай ярыҡтан* (Халыҡ йырынан).

**АРЫҠ** [2] *с.* Үтә ябыҡ; *киреһе* һимеҙ. *Арыҡ мал.*

● *Арыҡ ат һимерһә, курйын бәйләтмәҫ.* Мәҡәл. *Арыҡ һыйыр ҡойоға төшһә, тулай-тулай*

*төпкә батыр; һимеҙ һыйыр һаҙға батһа, һикереп сығып ергә баҫыр.* Мәҡәл.

**АРЫҠЛАНДЫРЫУ** *ҡ.* Арыҡҡа әйләндереү; ябыҡтырыу. *Малды арыҡландырыу.*

**АРЫҠЛАНЫУ** *ҡ.* Ныҡ ябығу, арыҡҡа әйләнеү. *Арыҡланған, кипкән бесәй, нәжес-бысраҡ ҡатҡан моронона.* Ш. Бабич.

**АРЫҠ-ТУРЫҠ** *с. йыйн.* Гел арыҡ, ябыҡ. *Хужалыҡта арыҡ-турыҡ ун бер-ун ике ат, бишалты үгеҙҙән башҡа транспорт юҡ.* «Башҡортостан ҡыҙы», 1969, № 6.

**АРЫМАЙ-ТАЛМАЙ** *р.* Арыу-ялҡыуҙы белмәй (эшләү). *Һөйә-һөйә ҡосағыма алып меңәрләгән юҡһыл улдарын, арымай-талмай йәштән өйрәтәмен ирек өсөн көрәш юлдарын.* Ғ. Амантай.

**АРЫМТАЛ** *с.* Тиҙ арыусан, арып барыусан. *Арымтал ат.*

**АРЫНДЫРЫУ** *ҡ.* **1.** Берәй эш-хәл кисереш һ. б. нәмәнән бушандырыу; ҡотолдороу. *Эштән арындырыу.* ■ *[Рәйсә:] — Рәми, күрәһеңме, ана балыҡ тоталар,— тине лә, ҡустыһын ауыр, һағышлы уйҙарҙан арындырыу ниәте менән: — әйҙә, шуларҙы ҡарарға барайыҡ,— тип өҫтәне.* Х. Мохтар.

**2.** Берәй нәмәне сифат йәһәтенән таҙартыу. *Һыуҙы тоҙҙан арындырыу.*

**АРЫНҺЫҘ** *с.* Киреләнмәй, ҡарышмай торған; йыуаш, күндәм. *Арынһыҙ кеше.*

● *Арынһыҙ малға эйә күп.* Әйтем.

**АРЫНЫУ** *ҡ.* Берәй нәмәнән йәки эш-хәлдән ҡотолоу; бушаныу. *Бирәсектән арыныу. Ҡайғынан арыныу. Мәшәҡәттән арыныу. Уйҙан арыныу. Хыялдан арыныу.*

**АРЫП-ТАЛЫУ** *ҡ.* Бик ныҡ арыу, хәлдән тайыу. *Тәнзилә әбей мәктәптә йыйыштырып, мейестәргә утын ташып, арып-талып ҡайтҡанлыҡтан .. башын мендәргә терәр-терәмәҫтән йоҡлап та китте.* М. Тажи.

**АРЫПТЫ-ТАРЫПТЫ** *с. диал.* Рәт-сиратһыҙ, тәртипһеҙ. *Баштан уҡ арыпты-тарыпты булған эштең аҙағы ла шулай бөтә инде.* Т. Морат.

**АРЫҪЛАН** *и.* **1.** Бесәй һымаҡтар ғаиләһенә ҡараған ҡыҫҡа йөнлө, һорғолт һары төҫлө эре йыртҡыс йәнлек (атаһы яллы була). *Ата арыҫлан. Инә арыҫлан.*

**2.** *күсм.* Ҡурҡыуҙы белмәгән, батыр, ғәйрәтле кешегә ҡарата әйтелә. *Ир арыҫланы.* ■ *Арыҫландар үҙ ерен залимдарҙан тапатмаҫ. Тапайым тип атлаһа, башҡорт ҡаны атлатмаҫ.* Ш. Бабич. *Дошмандары булһа ҡыҙыл төлкө, Салауат та батыр арыҫлан* (Халыҡ йырынан). **Арыҫлан йөрәкле** ҡурҡыу белмәгән, батыр.

**3.** *(баш хәреф менән) астр.* Зодиактың береһе (Ҡыҫала һәм Ҡыҙ йондоҙлоҡтары уртаһында урынлашҡан).

**4.** *(баш хәреф менән)* Ир-ат исеме.

● *Арыҫланға атланһаң, ҡамсың ҡылыс булһын.* Мәҡәл.

**АРЫТЫУ** *ҡ.* **1.** Хәлдән тайҙырыу, көс-хәлде бөтөрөү. *Ахырҙа .. аттарын арытып, үҙҙәре лә хәлдән тайған ҡыуыусылар йәйләүгә кире ҡайтҡан.* Н. Иҙелбай.

**2.** *эйһ. ф. ҡар.* **арыу** [1]. *Арытып ташланы.* ■ *— Үҙең беләһең, хәҙер йәш тә күпкә китеп бара, арыта.* К. Мәргән.

**АРЫУ** [1] *ҡ.* Көс-хәлдән яҙыу, хәлдән тайыу; хәлһеҙләнеү. *Бейек икән Балҡан тауы, менә алмай арыныҡ беҙ* (Бәйеттән)./Талыу. *Күҙ арыны.*

● *Аҙыҡлы ат арымаҫ.* Әйтем. *Атлының аяғы ла арымаҫ, туны ла туҙмаҫ.* Әйтем.

**АРЫУ** [2] *с.* **1.** Яҡшы, һәйбәт; ярарлыҡ. *Арыу ниәт. Арыу эш.* ■ *— Атайың да ауылдың бер арыу, йыуаш кешеһе ине, мәрхүм. Былай үҙең дә тыштан арыу ғына кеше кеүек күренәһең.* Ғ. Дәүләтшин.— *Бынан һуң беҙ арыу йәшәрбеҙ, ни теләһәк, шул булыр,— ти ҡыҙ* (Әкиәттән).

**2.** Бер саманан артығыраҡ; байтаҡ. *Юртаҡ атҡа юл ҡыҫҡа, тигәндәр бит, беҙ ҙә юрта торғас арыу ғына ер киттек.* Ә. Ихсан.

◆ **Арыу булыу** 1) бер аҙ һауығыу; шәбәйеү; 2) үсәп әйтелә. *Эй, арыу булды, арыу булды мәғишәт айҡалып. «Йәшәһен киммәтселек!» — тип һикерә-ырғый бай халыҡ.* Ш. Бабич. **Арыу итеү** 1) бер аҙ һауыҡтырыу; шәбәйтәү; 2) үсәп әйтелә; яҡшы итеү. *[Бай:] Арыу иттем әле, алдап бер затлы нәмәһен алдым* (Әкиәттән). **Арыу күреү** хуп күреү, яратыу. **Арыумы** исәнләшеү һүҙе. *[Хафиз:] Мөғәллимә кәрендәш, арыумы?* М. Тажи. **Арыу уҡ** күп кенә, байтаҡ. *Һөйләшеп килә торғас, арыу уҡ ер киткәнбеҙ.* **Арыу әле** исән-һау, сәләмәт (сәләмгә яуап итеп әйтелә).

**АРЫУЛАНДЫРЫУ** *ҡ.* **1.** Яҡшы яҡҡа үҙгәртеү. *Холоҡто арыуландырыу.*

**2.** Бер аҙ һауыҡтырыу, шәбәйтеү. *Ауырыуҙы арыуландырып сығарыу.*

**АРЫУЛАНЫУ** *ҡ.* **1.** Яҡшы яҡҡа үҙгәреү; яҡшырыу, һәйбәтләнеү. *«Көрәш» колхозында эштәр шөйлә арыулана башланы.* Б. Бикбай.

**2.** Бер аҙ һауығыу, арыу булыу. *Хәл йыйҙым, кәйефем яҡшыланды, өйөмә ҡайтып киттем арыуланып.*

**АРЫУЛАУ** *ҡ.* Күмеү йолаһы буйынса, мәйетте ерләүгә әҙерләү (йыуыу, кәфен кейҙереү һ. б.). *Мәйетте арыуламағандар әле. Арыулап оҙатыу.* ■ *Күсәрбай ағайым мәңгегә юғалды. Инде иң һуңғы бурысыбыҙ — уны арыулап, иң ҙур кәҙер менән ерләү.* Т. Хәйбуллин.

**АРЫШ** [1] *и.* **1.** Оҙонса нәҙек орлоҡло, ҡыяҡ япраҡлы ашлыҡ. *Тыу арыш. Көҙгө арыш. Яҙғы арыш. Арыш һеркәһе. Арыш сәсеү. Арыш урыу.* ■ *Күптән арыш ем алған, алтын башаҡтар ярған, туҡ емдәрен күтәрә алмай, баштарын [ергә] һалған.* Д. Юлтый.

**2.** Шул ашлыҡтың орлоғо. *Арыш бөртөгө. Арыш оно.*

◆ **Арыш атаһы** арыш башағында була торған оҙон ҡара бәшмәк (медицинала ҡулланыла). **Арыш боламығы** былағай, аҡылға утлырып өлгөрмәгән кешегә әйтелә. *[Йыһан — Ғилмиғә:] Йөрө инде кеше көлдөрөп, арыш боламығы менән.* Х. Ибраһимов. **Арыш зәңгәре** *ҡар.* **зәңгәрсуҡ.**

● *Арыш икмәген баллап аша.* Әйтем. *Һаламға үҫкән арыштың башы булмай.* Әйтем.

**АРЫШ** [2] *и. диал.* Артылыш. *Анау ғына тауҙың арышы бынау ғына тауға ҡарышы* (Халыҡ йырынан).

**АРЫШ** [3] *и. диал.* Тәртә.

**АРЫШБАШ** *и.* Суҡ тамырлы, башы арыш башағына оҡшаш ҡыяҡлы үлән. *Арышбаш тамырлы ерҙә үҫә.*

**АС** [1] [*рус.* ⟨ *фр.*] *и.* *һөйл.* Һауа һуғышында һәм һауала осоуҙа иң оҫта батыр лётчик.

**АС** [2] *с.* **1.** Оҙаҡ ашамаған, ашағыһы килгән, тамағы туҡ түгел. *Ас айыу. Ас бүре. Ас булыу. Ас ҡалыу.* // *Аска интегеү. Астан үлеү.* / Ашар аҙыҡһыҙ. *Ас итеү.* ■ *Эй ҡалын ҡорһаҡлы бай, һәм ҡорһаҡлы, һәм «инсафлы» бай, ай буйына ас тороп, астар хәлен һиҙҙеңме, әй!* Ш. Бабич.

**2.** *күсм.* Бик йоҡа итле; ҡаҡса, нәҙек. *Ас яңаҡ.* ■ *Әле генә булһа онота алмайым ас билемдән ҡыҫып һөйгәнең* (Халыҡ йырынан).

**3.** *күсм.* Эсе буш, ҡоро көп; туҡ түгел. *Ас бойҙай.*

◆ **Ас бет** *әрл.* аслы-туҡлы йәшәгән кешегә ҡарата әйтелә. **Ас күҙ** *ҡар.* **күҙ. Ас ҡарынлай** (*йәки* **ҡарынға**) *ҡар.* **ҡарын.**

● *Ас кешенең асыуы яман.* Әйтем. *Ас хәлен туҡ белмәҫ, ауырыу хәлен һау белмәҫ.* Әйтем.

**АСА** *и.* Бер төптән айырылып киткән бер нисә тармаҡ; айырса, сата. *Һәнәк асаһы.*

◆ **Тимер аса** күмер үртәгәндә, баҫырылған ағастың аҫтына ут төртә торған ҡорал.

**АСАБАҒАН** *и.* *диал.* Саталы бағана.

**АСАҒАС** *и.* Тирмәнең сағарағын асыу өсөн ҡулланыла торған аса башлы ҡолға.

**АСАҒОЙРОҠ** *и.* Асаланып торған ҡойроҡло тараҡан һымаҡ бөжәк (өйҙөң еүеш ерҙәрендә, иҙән аҫтарында була).

**АСАЙЫШ** [*фарс.*] *и.* *иҫк.* Дөйөм тыныслыҡ, именлек.

**АСАҠАЙ** *и.* *диал.* Асағойроҡ.

**АСАЛАҠ** *и.* Ҡайсының бер йәбе.

**АСАЛАҠ-ЙОМАЛАҠ** *с.* Асылыр-асылмаҫ (күҙгә ҡарата). *Бер көн Нурлат музейҙа үҙ картинаһына асалаҡ-йомалаҡ күҙҙәре менән оҙаҡ-оҙаҡ теклән ҡарап торған аҡ һаҡаллы картты осратты.* Ф. Исәнғолов.

**АСАЛАНЫУ** *ҡ.* Асаға айырылыу.

**АСАЛЫ** *с.* Асаланып, тармаҡланып торған; саталы. *Асалы ағас.* ■ *Ике асалы нәҙек телен ауыҙын асмай ғына сығарып-сығарып ала икән йылан.* Ж. Кейекбаев.

◆ **Асалы ҡойроҡ** *диал.* асағойроҡ.

**АСАМАЙ** [1] *и.* Остары бер-береһенә киртеп кейҙерелеп, ҡыуышлап ултыртылған ҡыйыҡ тәрәүе. *Ғатаулла ҡарт .. өрлөк өҫтөндә асамай ояһы сокоп ултыра.* Й. Солтанов.

**АСАМАЙ** [2] *с.* **1.** Береһенә икенсеһе арҡыры. *Асамай юл. Асамай һаплы ҡылыс.* / Бер-береһенә ҡара-ҡаршы. *Асамай күрше. Асамай ишек.* // *Асамай тоташтырыу.* ■ *Алпаров, ҡулдарын күкрәгене асамай ҡуйып, акрын ғына ишекле-түрле йөрөп алды.* Я. Вәлиев.

**2.** *диал.* Саталы, айырсалы.

**АСАМАЙЛАУ** [1] *ҡ.* Өй башына асамай [1] ҡуйыу.

**АСАМАЙЛАУ** [2] *ҡ.* Бер нәмәгә икенсе нәмәне арҡыры ҡуйыу.

**АСАН** *с.* *диал.* Ҡаҡса, сандыр.

**АСАРБАҠ** *с.* *диал.* *ҡар.* **асҡаҡ** 1.

**АСБЕ́СТ** [*рус.* ⟨ *лат.*] *и.* Утҡа һәм кислотаға сыҙамлы минерал; тау етене.

**АСИММЕТРИ́Я** [*рус.* ⟨ *гр.*] *и.* Симметрия булмаған йәки боҙолған хәл.

**АСИММЕТРИЯЛЫ** *с.* *ҡар.* **симметрияһыҙ.**

**АСКАРИ́ДА** [*рус.* ⟨ *гр.*] *и.* *зоол.* Кеше һәм хайуандарҙың эсәк буйында тереклек итә торған оҙон йомро селәүсен.

**АСКЕРНӘ** *с.* Күпме ашаһа ла туя белмәгән мәскәй.

**АСКЕ́Т** [*рус.* ⟨ *гр.*] *и.* Донъя рәхәттәренән баш тартып, үҙен-үҙе сикләп, ҡыҫып йәшәгән кеше.

**АСКЕТИ́ЗМ** [*рус.* ⟨ *фр.*] *и.* **1.** Рухи камиллыҡҡа ирешеү өсөн тип, донъя рәхәттәренән баш тартырға, күңел теләктәрен сикләргә саҡырған дини-әхләҡи тәғлимәт.

**2.** *ҡар.* **аскетлыҡ.**

**АСКЕТЛЫҠ** *и.* Донъя рәхәттәренән баш тартҡан, бик тотанаҡлы суфыйҙарса ғүмер итеп, йәшәү.

**АСКОРБИН** [*рус.* аскорбиновый] *с.*: **аскорбин кислотаһы** организмда матдәләр алмашыныуының нормаллеге өсөн кәрәк булған органик матдә; С витамины.

**АСҠАҠ** *с.* **1.** Гел ашағыһы килеп торған, ашап туя алмаған.

**2.** *күсм.* Йоҡа итле; ҡаҡса, сандыр. *Бына ишек асылды. Унан асҡаҡ йөҙлө бер ҡатын килеп сыҡты.* Ш. Насыров.

**АСҠАҠЛАНЫУ** *ҡ.* **1.** Асҡаҡҡа (1 мәғ.) әйләнеү, асҡаҡ булыу.

**2.** *ҡар.* **асҡаҡлау.**

**АСҠАҠЛАУ** *ҡ.* Туйынып ала алмау, гел ас һымаҡ һиҙеү. *Асҡаҡлаған һыйыр һемтәнләп килеп, .. баҙға төшкән дә киткән.* И. Ғиззәтуллин.

**АСҠАҠҺЫУ** *ҡ.* *диал.* Асҡаҡлау.

**АСҠАЛАҠ** *с.* *ҡар.* **асҡаҡ** 1.

**АСҠЫС** *и.* **1.** Йоҙаҡты бикләй һәм аса торған ҡорал. *Өй асҡысы. Келәт асҡысы.* ■ *Тайба әб[illegible] сәс үрмесенә тағылған көмәк асҡыс араһын[illegible] береһен һайлап, һандыҡтың ҙур ҡара йоҙағын асты.* З. Биишева.

**2.** Машинаның, механизмдың гайка-маҙарын бора, ныҒыта торған ҡорал. *Гайка асҡысы. Сипарат асҡысы.*

**3.** *күсм.* Ниҙелер сисеү, асыу, көйләү сараһы. *Тел асҡысы.* ■ *Эске донъяһын аңлағанда ғына, йөрәгенә асҡыс тапҡанда ғына кеше һине аңлай.* Ш. Насыров.

● *Мәҡәл — һүҙ асҡысы.* Әйтем.

**АСЛА** *р.* *ҡар.* **аслан.**

**АСЛАМСЫ** *и.* *иҫк.* Ҡыҙыл мал һәм аҫыл мал менән йөрөп һатыу иткән ваҡ сауҙагәр.

● *Асламсыһыҙ баҙар булмай, уйынсыһыҙ туй булмай.* Мәҡәл.

**АСЛАН** [*ғәр.*] *р.* Бер ҙә, һис тә. *[Сабир мулла:] Зыя Камалиҙың .. минең урынға мулла булыуына аслан ризалығым юҡ.* Б. Ишемғол. *[Ғарифулла бабай:] Васыят итеп әйтәм, мине, бынау ҡарағайҙарға ғүмер биргән ағайыңдарҙы аслан онотма.* Н. Мусин.

**АСЛЫҠ** *и.* Ашарға юҡлыҡтан булған ауыр хәл, аҙыҡ юҡлығы; ҡытлыҡ, йотлоҡ. // *Аслыҡ йыл.* ■ *Аслыҡты ла, ялангаслыҡты ла күрҙек. Берәүҙәр туйып һикергәндә, беҙҙең туңып һикергән саҡтарыбыҙ булды. Бирешмәнек.* Ш. Шәһәр.

● *Аш ҡәҙерен белмәһәң, аслыҡ бирер яфаңды.* Мәҡәл.

**АСЛЫ-ТУКЛЫ** *р.* Туя ашауһыҙ, туйыр-туймаҫ. *Аслы-туклы йәшәү.* ■ *Аслы-туклы йөрөп беҙ эшләйбеҙ иртәһән дә, кара кисен дә.* Д. Юлтый.

**АСМА** *и.* Тәҙрәнең асыла-ябыла торған өлөшө. *Асмалы ла тәҙрә асмаһын асып, йәмле йәй көндәрен карайым* (Халык йырынан).

**АСМАЛЫ** *с.* Асылып-ябылмалы. *Асмалы тәҙрә.*— ■ *Асмалы бәкеләр алдым кәйнештәргә бүләккә* (Халык йырынан).

**АСМАН** [*фарс.*] *и. кит.* Күк йөҙө; күк. *Асманға ашыу.* ■ *Көн дә кис асманға ен-шайтан менә, менгән береһе бөтә, корбан була.* Ш. Бабич. *Которған эт һауаға карап өргән менән асманда торған айҙың нуры китмәҫ.* М. Акмулла.

**АСМУХА** [*рус.* осьмуха] *и. кар.* **эсмуха.**

**АСМӘЙЕЛ** *с.* Ашап туя белмәҫ; мәскәй, аскернә.

**АСНӘКӘТ** *с. диал.* Аскернә.

**АСПЕ́КТ** [*рус.* ⟨ *лат.*] *и. кит.* Берәр күренеш, хәл, һ. б. нәмәләрҙе тикшереүҙә булған караш. *[Романда] тормош үҙенең үҫешендә төрлө яклап, төрлө аспектта һүрәтләнә.* Ә. Вахитов.

**АСПИРА́НТ** [*рус.* ⟨ *лат.*] *и.* Ғилми эшкә йәки юғары укыу йортонда укытыуға әҙерләнгән кеше.

**АСПИРАНТУ́РА** [*рус.* ⟨ *лат.*] *и.* Ғилми учреждение һәм юғары укыу йорттарындағы кадрҙар әҙерләү системаһы. *Аспирантураға инеү. Аспирантурала укыу. Аспирантура тамамлау.*

**АСПИРИ́Н** [*рус.* ⟨ *нем.*] *и.* Тәндең эҫелеген кәметә, һыҙлауын баҫа торған дарыу.

**АССАМБЛЕ́Я** [*рус.* ⟨ *фр.*] *и.* Халык-ара ойошманың дөйөм йыйылышы. *Бөтә донъя тыныслык ассамблеяһы. Берләшкән Милләттәр Ойошмаһының Генераль Ассамблеяһы.*

**АССЕНИЗА́ТОР** [*рус.*] *и.* Ассенизацияла эшләгән кеше.

**АССЕНИЗА́ЦИЯ** [*рус.* ⟨ *фр.*] *и.* Ауыл, кала ерендәге бысракты, һаркынды һыуҙы таҙартыу һәм зарарһыҙлау өсөн хеҙмәт иткән санитар саралар һәм короламалар системаһы. *Ассенизация эштәре.*

**АССИГНА́ЦИЯ** [*рус.* ⟨ *фр.*] *и.* Россияла 1769 йылдан 1843 йылға тиклем сығарылған кағыҙ акса./*иҫк. һөйл.* Кағыҙ акса.

**АССИГНОВА́НИЕ** [*рус.*] *и.* Берәй эшкә бүленгән акса. *Өҫтәмә ассигнование. Һаулык һаклау эшенә бирелгән ассигнование.*

**АССИМИЛЯТИВ** [*рус.* ассимилятивный] *с.* Ассимиляцияға килтерелгән.

**АССИМИЛЯ́ЦИЯ** [*рус.* ⟨ *лат.*] *и.* **1.** Тәьҫир, йоғонто аша бер нәмәнең икенсе нәмәне үҙенә окшашландырыуы, йотоуы. *Өндәр ассимиляцияһы. Ассимиляцияға бирелеү.*

**2.** *биол.* Тереклек эйәһе йәки үҫемлек организмының үҙенә ингән матдәләрҙе үҙләштереүе процесы.

**АССИСТЕ́НТ** [*рус.* ⟨ *лат.*] *и.* **1.** Операция эшләгән йәки ғилми эш башкарған врач профессорҙың ярҙамсыһы.

**2.** Юғары укыу йорттарындағы иң кесе укытыусы вазифаһы һәм шул вазифаны башкарған кеше.

**АССОНА́НС** [*рус.* ⟨ *фр.*] *и. әҙ.* Шиғырҙа окшаш һуҙынкы өндәрҙең кабатланыуы.

**АССОРТИМЕ́НТ** [*рус.* ⟨ *фр.*] *и.* Бер предприятиела етештерелгән йәки һатылған тауарҙарҙың төрҙәр йыйылмаһы. *Аҙык ассортименты. Ассортиментты киңәйтеү. Ассортиментты төрләндереү.*

**АССОЦИАТИВ** [*рус.* ассоциативный] *с.* Ассоциацияға (3 мәғ.) королған.

**АССОЦИА́ЦИЯ** [*рус.* ⟨ *лат.*] *и.* **1.** Бер төрлө эш менән шөғөлләнгән кеше йәки ойошмаларҙың берләшмәһе. *Ғилми работниктар ассоциацияһы.*

**2.** Низең дә булһа кушылмаһы, төркөмө. *Молекулалар ассоциацияһы.*

**3.** Төрлө психик хәл (тойғо, уй, фекер) араһындағы эҙмә-эҙлекле бәйләнеш.

**АСТЕРО́ИД** [*рус.* ⟨ *гр.*] *астр. гәҙәттә күпл.* Кояш тирәһендә, күберәк Марс менән Юпитер орбиталары араһында әйләнеп йөрөгән вак планеталар.

**А́СТМА** [*рус.* ⟨ *гр.*] *и.* Йөрәк йәки бронхалар сиренән килгән быума өйәнәге; быума йөтәл. *Йөрәк астмаһы.*

**АСТМА́ТИК** [*рус.*] *и. һөйл.* Астма менән ауырыған кеше.

**А́СТРА** [*рус.* ⟨ *гр.*] *и.* Катмарлы сәскәләр ғаиләһенә ингән еҫһеҙ эре сәскәле бакса гөлө; йондоҙ сәскә. *Йөнтәҫ астра.*

**АСТРОБИОЛО́ГИЯ** [*рус.* ⟨ *фр.*] *и.* Йыһанда тереклек булыу мөмкинлеген өйрәнә торған фән.

**АСТРОБОТА́НИКА** [*рус.* ⟨ *гр.*] *и.* Астробиологияның Кояш системаһындағы планеталарҙа үҫемлектәр булыу мөмкинлеген өйрәнә торған бүлеге.

**АСТРО́ЛОГ** [*рус.*] *и.* Астрология менән шөғөлләнгән кеше.

**АСТРОЛО́ГИЯ** [*рус.* ⟨ *гр.*] *и.* Күк есемдәре ерҙәге вакиғаларға һәм кеше яҙмышына тәьҫир итә, тип иҫәпләгән боронғо ялған тәғлимәт (йондоҙҙарға карап күрәҙәлек итеү менән шөғөлләнә).

**АСТРОЛЯ́БИЯ** [*рус.* ⟨ *гр.*] *и.* 18 быуатка тиклем астрономияла оҙонлок һәм киңлекте билдәләү, һуңынан ер бүлеү эшендә кулланылған мөйөш үлсәү приборы.

**АСТРОНА́ВТ** [*рус.*] *и.* Астронавтика буйынса белгес.

**АСТРОНА́ВТИКА** [*рус.* ⟨ *гр.*] *и.* Оскос аппараттарҙың ғаләмгә осошон өйрәнгән фән; космонавтика.

**АСТРОНО́М** [*рус.*] *и.* Астрономия буйынса белгес. *Астроном булыу.*

**АСТРОНОМИК** *с.* Астрономияға мөнәсәбәтле. *Астрономик асыш. Астрономик йыл. Астрономик обсерватория.*

**АСТРОНО́МИЯ** [*рус.* ⟨ *гр.*] *и.* Күк есемдәренең килеп сығышын һәм уларҙың барлыкка килешен, төҙөлөшөн, үҙгәрешен, хәрәкәт закондарын, химик составын өйрәнә торған фән.

**АСТРОФИ́ЗИК** [*рус.*] *и.* Астрофизика буйынса белгес.

**АСТРОФИ́ЗИКА** [*рус.* ⟨ *гр.*] *и.* Физиканың күк есемдәренең физик хәлен һәм составын өйрәнә торған бүлеге.

**АСТЫРЫУ** *к. йөкм. кар.* **асыу** [2].

◆ **Ауыҙ [ҙа] астырмау** *кар.* **ауыҙ.**

**АСФАЛЬТ** *и.* **1.** Юлдарға, тротуарға түшәү өсөн ҡулланылған һорғолт ҡара төҫтәге, ыҫмала һымаҡ, тәбиғи һәм яһалма төҙөү материалы. *Асфальт түшәү. Асфальт йәйеү.* ■ *Һикәлтәле урам, юлдарға асфальттар түшәлде.* Ғ. Сәләм.

**2.** Шул материалдан түшәлгән юл. *Асфальттан атлау.*

**АСФАЛЬТЛЫ** *с.* Асфальт түшәлгән. *Асфальтлы урам. Асфальтлы юл.*

**АСФАЛЬТЛАУ** *к.* Асфальт түшәү. *Майҙанды асфальтлау. Урамды асфальтлау. Юлды асфальтлау.*

**АСЫ** *с. кар.* **әсе** [1].

**АСЫҒАЙЫУ** *к. кар.* **асыҡлаиыу.**

**АСЫҒАУЫҘ** *и. һөйл.* Өҫтөн асыҡ итеп майға бешергән ваҡ бәлеш. *[Сәрбиямал] иттән бик тәмле итеп асығауыҙ бешерҙе.* З. Биишева.

**АСЫҒЫУ** (асыҡ*ғ*) *к.* Ас хәлгә килеү, ас булыу. *[Төлкө] күптән бирле ашамағанға, бик асыҡкан булған.* Ж. Кейекбаев. *Бара торғас, был һунарсы асығып, бөтөнләй хәлдән тайып, юл буйына килеп йығылды, ти* (Әкиәттән)./ Аслыҡ кисереү, ас хәлдә йәшәү. *Көҙгө байлыкта бер аҙ көрәйеп калған халыҡ кабат асыға башланы.* Ф. Иҫәнғолов.

● *Асыҡкандан каныҡкан яман.* Мәҡәл.

**АСЫҠ** [1] *с.* **1.** Асып ҡуйылған, асыулы; кирәһе ябыҡ. *Асыҡ тәҙрә. Асыҡ булыу. Асыҡ шаршау. Асыҡ тороу. Асыҡ калыу.*/Асып ҡалдырылған. *Асыҡ китап.*/Бикһеҙ, йоҙаҡһыҙ. *Асыҡ келәт.*/Эшләй башлаған, эшләгән. *Асыҡ магазин.*

**2.** Бер ни менән дә ышыҡланмаған, ағас, ҡыуаҡлыҡтар менән ҡапланмаған. *Асыҡ ялан. Асыҡ ер.* ■ *Аҡселән буйындағы ауылдарҙың күбеһе тау битләүендә, асыҡ урындарҙа ултырғанға әллә ҡайҙан күре[неп тора].* Б. Бикбай.

**3.** Өҫтән йәки тирә-яҡтан ҡапланмаған. *Асыҡ веранда. Асыҡ машина. Асыҡ һарай.* ■ *Әгәр ҙә пассажир вагондары тура килмәһә, күмер вагондарында, площадкаларҙа йәки бөтөнләй асыҡ вагондарҙа барабыҙ.* Д. Юлтый.

**4.** Болот менән ҡапланмаған; аяҙ. *Асыҡ күк. Асыҡ күк.*

**5.** Теләүселәргә ҡатнашырға мөмкин булған. *Асыҡ суд. Асыҡ йыйылыш.* ■ *[Мәстүрә:] Бөгөн бер нисә ауылдан йыйылған уҡытыусылар өсөн минең класымда асыҡ дәрес булды.* Ш. Янбаев.

**6.** Яҡшы ишетелгән, күренгән, аныҡ булған. *Асыҡ тауыш. Асыҡ һүрәт.* // *Асыҡ яңғырау. Асыҡ итеп яҙыу.* ■ *Был һүҙҙәрҙе ул [Хәйруллин] шыма, асыҡ итеп һөйләне.* С. Агиш.

**7.** Төҫө йәһәтенән баҙыҡ, яҡты. *Асыҡ зәңгәр. Асыҡ ҡыҙыл.*

**8.** *күсм.* Күренеп, һиҙелеп торорлоҡ; йәшерен түгел. // *Асыҡ белдереү.* ■ *Аҫабалыҡ өсөн булған был ыҙғыш тора-бара асыҡ дошманлыҡҡа илтеп еткергән.* Б. Бикбай.

**9.** *күсм.* Кешегә яҡшы мөғәмәләле; алсаҡ, көләс. *Аҡ күңелле, асыҡ йөҙлө Мәрйәм туташ, исеменде хөрмәт иткән аллаң, туташ.* Ш. Бабич. *Ололар алдынан сыҡҡанда ал менән сыҡ, ҡыҙыҡай, асыҡ килеп тип маҡтарҙар, өлгө булырһың, ҡыҙыҡай* (Туй йырынан).

◆ **Асыҡ ауыҙ** *кар.* **ауыҙ. Асыҡ ижек** *кар.* **ижек.** Асыҡ хат кемгәләр тәғәйенләнеп газета йәки журналда баҫылған хат.

● *Асыҡ капканан кем кермәҫ.* Әйтем.

**АСЫҠ** [2] *и. диал.* Аҡлан. *Бер асыкта донъя йөҙөн каплап мал ята, ти* (Әкиәттән).

**АСЫҠЛАМА** *и.* Берәй нәмәгә ҡарата бирелгән йәки яҙылған аңлатма.

**АСЫҠЛАНЫУ** *к.* **1.** *төш. кар.* **асыҡлау.** *Асыкланган мәсьәлә.*

**2.** *кайт. кар.* **асыҡлау.**

**АСЫҠЛАТЫУ** *к. йөкм. кар.* **асыҡлау.**

**АСЫҠЛАУ** *к.* Берәй эш-хәлдең асылын билдәләү. *Мәсьәләне асыҡлау. Енәйәттең сәбәбен асыҡлау.*/Асыҡ итеп аңлатыу; төшөндөрөү. *Асыклап әйтеү.* ■ *Айбулат үҙенең был туралағы уйҙарын .. асыклап куя.* Һ. Дәүләтшина.

**АСЫҠЛЫҠ** [1] *и.* **1.** Ҡапланмай ҡалған асыҡ ер. *Был асыклыктан палатканың эсе күренеп тора.* Н. Ҡәрип.

**2.** Ағас менән ҡапланмаған асыҡ урын; аҡлан. *Тау ҡырлатып яткан берләм һукмак менән берике сакрым үткәс, алда асыклык күренде.* Ә. Вахитов.

**АСЫҠЛЫҠ** [2] *и.* Ниҙеңдер сәбәбенә, мәғәнәһенә, торошона ҡарата булған аңлайышлыҡ. *Асыклык индереү.* ■ *Үмәрҙең тәбиғәте шулай: ул ғазаплы икеләнеүҙә оҙаҡ кала алмай, уның натураһы асыклык талап итә.* М. Минһажетдинов.

**АСЫҠТАН-АСЫҠ** *р.* Йәшереп тормай, йәшерен-бошоронһоҙ. *Асыҡтан-асыҡ эшләү. Асыҡтан-асыҡ йөрөү.* ■ *Асыҡтан-асыҡ әйтмәһә лә, Зыя Сәғиҙәнең борсолғанын һиҙҙе.* М. Тажи.

**АСЫҠ-ТИШЕК** *с.* Тишелеп, туҙып бөткән; бөтөн түгел; тишек-тошоҡ. *Асыҡ-тишек койма.*

**АСЫҠТЫРЫУ** *к.* **1.** Ас тотоу, аслыҡ кисертеү. *Кешене асыктырыу.*

**АСЫЛ** [*ғәр.*] *и.* **1.** Ниҙеңдер төп мәғәнәһе, төп нигеҙ. *Эштең асылы. Кешелектең асылы. Мәсьәләнең асылына төшөнөү. Асылын аңлау.* ■ *Был хәлдең [сәсеүҙең һуҙылыуы] асылы колхоз йыйылышында ғына асыкланды.* Ф. Иҫәнғолов.

**2.** *с. мәғ.* Башланғыс, нигеҙ булған, төп. *Асыл мәғәнә.*

**3.** *с. мәғ.* Сифаты буйынса таҙа; саф, ысын. *Ҡаш караһы асыл кара, һиңә бирһәм, әҙ кала* (Халыҡ йырынан).

◆ **Асылға ҡайтыу** 1) ысын, тәбиғи хәлгә ҡайтыу. *[Насир хәҙрәт] үҙенең һөйгән мәсетенә мулла булды. Үҙ һүҙе менән әйткәндә, асылына кайтты.* И. Насыри; 2) вафат булыу, үлеү. *Шаһибәрәкте һораһағыҙ, асылына кайткан, өйҙә юк* (Халыҡ йырынан).

● *Егет арыу булһа, асылын һорама.* Мәҡәл.

**АСЫЛДА** *р.* Ысынында, ғәмәлдә. *Асылда ылаусыларҙың барыһы ла тип әйтерлек ҡатынҡыҙҙар йәки малайҙар ине.* Ғ. Ғүмәр.

**АСЫЛЫ** [1] *и. диал.* Татырлы ер. *Малдар асылыла йөрөй.*

**АСЫЛЫ** [2] *инш.* Күрәһең, ахыры. *Ул килмәҫкә уйлаған, асылы.*

**АСЫЛЫҠ** [1] *и. диал.* Татырлы ер.

**АСЫЛЫҠ** [2] *и. диал.* Әсетке.

**АСЫЛЫУ** *к.* **1.** *төш. кар.* **асыу**[2]. *Ауылда мәктәп асылды. Асылған тәҙрә.*

**2.** Ябыҡ, бикле хәлдән асыҡ хәлгә килеү. *Ишек асылды.*/Йәйеп тағатылыу, турайыу. *Зонтик асылды. Парашют асылды.*

**3.** Сәскә атыу, япраҡланыу. *Гөл-сәскәләр асылды, хуш еҫтәре сәселде.* Ш. Бабич.

**4.** Ҡаплап, кәртәләп торған нәмәнән әрселеү, таҙарыныу. *Йылға асылды. Күк йөҙө асылды. Юл ҡарҙан асылды.* ■ *Яҙ. Ҡояш. Тау түбәләре асылған, унда хатта үләндәр ҙә йәшәреп күренә.* Ғ. Ғүмәр. *Иртә лә генә томан, кис тә томан, ник асылмай икән был томан* (Халыҡ йырынан).

**5.** Баҙыҡ, яҡты хәлгә күсеү (төҫкә ҡарата). *Йыуған керҙәрем асылыр микән, был ҡайғыларым баҫылыр микән* (Халыҡ йырынан).

**6.** Ишетелеш яғынан яңғырауыҡлы, саф, таҙаға әйләнеү.

**7.** *күсм.* Күренеү, билдәле булыу. *Сер асылды.* ■ *Ят яҡтар, күҙ өйрәнмәгән юлдар. Аҙым һайын тиерлек яңы донъя асыла.* Р. Низамов.

**8.** *күсм.* Ихласланыу (һөйләшкәндә). *[Самауырсының] был бәйләнсек мулла алдында асылып киткеһе килмәй ине.* Ә. Вахитов. *Ат асыла икән юл күреп, ир асыла икән ил күреп* (Халыҡ йырынан).

◆ **Йөҙ асылыу** *кар.* **йөҙ**[1]. **Йоҡо асылыу** *кар.* **йоҡо**[1]. **Күн асылыу** *кар.* **күн**[3]. **Күҙ асылыу** *кар.* **күҙ. Күңел асылыу** *кар.* **күңел** 3. **Тел асылыу** *кар.* **тел.**

● *Йоҙаҡ асҡысһыҙ асылмай.* Мәҡәл.

**АСЫЛЫШЛЫ: асылышлы булыу** кем йәки нимәлер өсөн үҙ-ара һүҙгә килеү, яманлашыу. *[Сәлим өсөн] асылышлы булмаған кеше ҡалманы лабаһа. Әй, бала!* Я. Вәлиев.

**АСЫНЫУ**[1] *к. ҡайт. кар.* **асыу**[2]. *Асынып йоҡлау. Асынып ташлау.*

**АСЫНЫУ**[2] *к. кар.* **әсенеү.**

**АСЫРҒАЛАНЫУ** *к. кар.* **асырғаныу.** *Байназаров, эштең тағы ла киҫкенләшеп китеүенә асырғаланып, ни уйларға, ни әйтергә белмәй ултырҙы.* Х. Зарипов.

● *Саян асырғаланһа, үҙен-үҙе сағыр.* Мәҡәл.

**АСЫРҒАНЫУ** *к.* Асыу менән ярһыу. *Асырғанып тотоноу.* ■ *Ҡуҙыйкүрпәс асырғанып аттың уң яҡ ботона һуға, һул яҡ ботонан сәсрәп ҡан килеп сыға.* «Ҡуҙыйкүрпәс менән Маянһылыу».

**АСЫРТ** *и.* Көндөң асылған сағы. *Иртәнге асырт. Киске асырт.*

**АСЫРТАУ** *к. диал.* Аяҙыу.

**АСЫРЫУ** *к. кар.* **астырыу.**

**АСЫУ**[1] *и.* Ныҡ нәфрәтләнеп, йән көйөп, ярһыу хисе. *Асыу баҫылыу. Асыу һаҡлау. Асыу йөрөтөү. Асыу һүрелеү.* ■ *Полковник Тәфтиләү тыҡкән ҡандың асыуҙары бик тиҙ баҫылмаҫ* (Халыҡ йырынан). **Асыуға тейеү** асыуҙы ҡуҙғатыу; ҡыҙҙырыу. *Айыу — аҡыллы йыртҡыс. Әммә юҡҡа-барға асыуына тейһәң, холҡо боҙолоп китә, дыуамаллана башлай.* С. Кулибай. **Асыуҙы алыу** булған асыуҙы кемгә йәки нимәгәләр төшөрөү. *Бик эстәре көйә малайҙарҙың, шунлыҡтан улар асыуҙарын Тимерҙән ала башланы.* Б. Бикбай. **Асыу итеү** асыу менән, үс менән ниҙер ҡылыу.— *Ғәләүҙе шулай көйләп тормаһаң, асыу итеп йә инспекторға ошаҡлар, уға ышаныс бармы ни.* Т. Йәнәби. **Асыу килеү** асыу тәьҫирендә булыу, асыулы булыу. **Асыу ҡабарыу** бик ныҡ асыуланыу. *Ҡолморҙа старшинаның асыуы сиктән тыш ҡабарҙы. Ул тештәрен шығыр-шығыр иттереп бер-береһенә игәй.* Т. Хәйбуллин. **Асыу төшөрөү** асыу тойғоһон кемгәлер йүнәлтеү. *Рауил өйҙәгеләргә булған асыуын башҡаларға төшөрөп, йөрәген бер аҙ баҫа, буғай.* Б. Бикбай. **Йән асыуы** йөрәктән сыҡҡан ҡаты асыу. *[Абдрахман] биленән һуңғы бомбаны алып, йән асыуы менән уратып алған аҡтарға ташлаған.* Ә. Вахитов.

◆ **Асыуым да килмәһә** нимәгәләр йән көйгәндә, кәмһетеп әйтелә. *Ул да йөрөй кеше булып, асыуым да килмәһә.*

● *Асыуыңды ат ит, аҡылыңды теҙген ит.* Мәҡәл.

**АСЫУ**[2] *к.* **1.** Ишекте, ҡапҡасты ябыҡ түгел хәлгә килтереү. *Ишекте асыу. Тәҙрәне асыу.*/ Йоҙағын, биген алып, инерлек итеү. *Келәтте асыу. Өйҙө асыу.* ■ *Хасбулат олатай һандыҡтың бик күптән бирле бикле тороп тутыҡҡан йоҙағына кәрәсин тамыҙа-тамыҙа көскә асты.* З. Биишева. *Бер көтөү малай барып асыр баҫыуҙың ҡапҡаһын, ырғытыр ҡунаҡ уларға, күстәнәс тип, аҡсаһын.* Ш. Бабич.

**2.** Ниҙеңдер ауыҙын көпләп, ябып торған нәмәне алыу. *Банканы асыу. Шешәне асыу. Посылканы асыу.*

**3.** Ябыҡ булған нәмәне асыҡ хәлгә килтереү. *Китап битен асыу. Шаршауҙы асыу. Юрғанды асыу.*/Йомоҡ хәлдән асыҡ хәлгә килтереү. *Ауыҙҙы асыу. Күҙҙе асыу.*

**4.** Биген бороп, нимәгәләр үтергә, хәрәкәт итергә юл биреү. *Газды асыу. Канауҙы асыу. Кранды асыу.*

**5.** Ниҙеңдер эшмәкәрлеген башлап ебәреү. *Лавка асыу. Мәктәп асыу. Ашхана асыу. Күргәҙмә асыу.* ■ *Аллабирҙе тигән ҙур ауылдың Мәжит купец асты баҙарын* (Халыҡ йырынан)./ Башланғыс биреү, башлау. *Счёт асыу. Йыйылышты асыу. Олимпия уйындарын асыу. Ут асыу.* ■ *Яуызлыҡҡа яу асып, яҡшылыҡҡа юл асып, көн итҡән, ти, был йәйләү* (Ҡобайырҙан).

**6.** Өҫтән ҡаплаған ҡыртышты, ҡатламды аҡтарыу, әрсеү. *Сиҙәм асыу. Ырҙын асыу.*

**7.** Берәй нәмәнең төҫөн асыҡ итеү, таҙартыу. *Келәмдең төҫөн асайым тиһәң, тоҙло кәбеҫтә һыуында сылатылған сепрәк менән һөрт.* «Башҡортостан ҡыҙы», 1968, № II.

**8.** Берәй нәмәнең барлығын белеү, табыу. *Ҡаланан алтмыш километр төньяҡтараҡ, тауҙар араһында, күптән түгел яңы ҙур нефть яҡтылығы астылар.* Д. Исламов.

**9.** *күсм.* Билдәле итеү, фаш итеү, асыҡлау. *Ғәйепте асыу. Етешһеҙлектәрҙе асыу. Кәмселектәрҙе асыу.* / Күрһәтеп биреү. *Артист үҙ геройнаһының кисерештәрен дөрөҫ һәм оҫта аса.* /Эш-хәлде асыҡлау, айышын сисеү. *Мәсьәләне асыу.*

◆ **Ауыҙ асып ҡалыу** *кар.* **ауыҙ. Ауыҙ асыу** *кар.* **ауыҙ. Китап асыу** *кар.* **китап. Күҙ асҡыһыҙ** *кар.* **күҙ. Күҙҙе асыу** *кар.* **күҙ. Күңел асыу** *кар.* **күңел.**

● *Битһеҙ бүркен баҫмаҫ, бите бешһә лә, күҙен асмаҫ.* Мәҡәл.

**АСЫУ** [3]: **карын** (*йәки* **ҡорһаҡ, тамаҡ**) **асыу** асығыу.

**АСЫУ** [4] *к. кар.* **әсеү.**

**АСЫУАТ** *и. диал.* Әсе, татырлы ерҙә үҫә торған ҡаты үлән.

**АСЫУЛАНДЫРЫУ** *к.* Кемдең йәки нимәнеңдер асыуын ҡуҙғатыу. *Бүре әйтә: «Асыуландырһағыҙ, мин икегеҙҙе лә ашап ҡуйырмын, бир һөйәкте!» — ти* (Әкиәттән).

**АСЫУЛАНЫУ** *к.* Асыу тойғоhонда булыу, асыу килеү. *Батша бик ныҡ асыуланып, таҙҙы төрмәгә яптырып ҡуйҙы, ти* (Әкиәттән). / Кемгәлер асыу белдереү. *Муйылбикә үгәй улына, унан да бигерәк, кире холоҡло атаһына асыуланды.* Һ. Дәүләтшина.

**АСЫУЛАНЫШЫУ** *к. урт. кар.* **асыуланыу.**

◆ **Асыуланыштан булмаһын** асыуланышмайыҡ, яманлашмайыҡ тигән мәғәнәлә әйтелә. *[Дубов:] Ул ваҡытта, иптәш Байрамғолов, асыуланыштан булмаһын: мин урындағы партия ойошмаһынан ярҙам [һорайым].* К. Мәргән.

**АСЫУЛЫ** *с.* Асыу тойғоһо булған, асыуланған. *Асыулы йөҙ. Асыулы кеше. Асыулы ҡараш. Асыулы тауыш. Асыулы булыу.* ■ *Ҡунаҡтар алдында тауыш күтәрмәҫ өсөн, Бибикамал еңгә асыулы һүҙҙәрен әйтмәне.* А. Карнай.

**АСЫУСАН** *с.* Тиҙ генә асыуланып барыусан. *Асыусан да арыҫлан балаһы, йыуаш микән юлбарыҫ балаһы* (Халыҡ йырынан).

**АСЫШ** *и.* Фән, әҙәбиәт өлкәһендә табылған яңылыҡ. *Ҙур асыш. Мөһим асыш. Асыш яһау.* ■ *Үҙ темаңды табыу художестволы асыштарға килтерә, дөйөм әҙәбиәт үҫешенә бер этәргес, кеүәт бирә.* Ә. Вахитов.

**АСЫШЫУ** *к. урт. ярҙамл. кар.* **асыу** [2]. *Ҡапҡа асышыу. Күргәҙмә асышыу.*

**АС-ЯЛАНҒАС** *с.* Ашҡа, кейемгә бик мохтаж. *Ас-ялангас кеше. // Ас-ялангас йәшәү.* ■ *Эй ҡалын ҡорһаҡлы бай, .. туҡ тороп, рәхәткә күнгән эстәрең ҡыйналдымы, ас-ялангастарга шәфҡәт хистәрең уяндымы?* Ш. Бабич. *Бесән саптыҡ, иген иктек, ас-ялангас эшләп, тир түктек* (Халыҡ йырынан).

**АҪ** [1] *и.* Һыуһарҙар төркөмөнә ҡараған затлы тиреле, йәйен һор, ҡышын аҡ төҫтәге йыртҡыс йәнлек. *Аҫ тиреһе.*

**АҪ** [2] *и.* **1.** Билдәле бер кимәлдән түбән булған тараф; *киреһе* өҫ. *Аҫҡа төшөү. Аҫта тороу. Аҫтан күтәреү. Аҫта ҡалыу. // Аҫ яҡ.* ■ *Аҫта упҡын, өҫтә күк тын.* М. Кәрим.

**2.** Бер нәмәнең түбәнге яғындағы урын. *Аяҡ аҫты. Ҡар аҫты. Һыу аҫты. Аҫта ҡалыу.* /Быуындың бөгөлгән эске яғы. *Ҡултыҡ аҫты. Тубыҡ аҫты.*

**3.** Һарҡыуҙың түбәнге яғы. *Тау аҫты. Яр аҫты.* /Һыу, һауа ағымының ниҙәндер түбәнге яғы. *Быуа аҫты. Ел аҫты.*

**4.** 3-сө зат эйл. һәм төб., сығн., у.-в. клш. аффикстары менән бәйләүес функцияһында ҡулланыла (*кар.* **аҫтына, аҫтынан, аҫтында**).

◆ **Өҫтө күкәй ҡабығы, аҫты торна тоҙағы** тыштан һәйбәт кейенеп, эстә кейеме насар булған кешегә әйтелә. **Сынаяҡ аҫты** *кар.* **сынаяҡ** 1.

● *Аҫтындағын алты ай эҙләгән.* Әйтем.

**АҪА** *и.* Һуғып эшләнгән биҙәк (балаҫтағы).

**АҪАБА** [*гәр.*] *и. иҫк.* **1.** Нәҫелдән күсә килгән ерҙең хужаһы. *// Аҫаба башҡорт.*

**2.** Ире үлгән ҡатындың муллаға биргәндән ҡалған малы (уны туғандары үҙ-ара бүлешәләр).

**АҪАЛ** [*гәр.*] *и. иҫк.* Затлы-ырыу. *Аҙаматтар, суралар, аҫалда тыуған мырҙалар, кәңәшеңде ары һал, ҡалағыңды бире һал* (Ҡобайырҙан).

**АҪАЛАУ** *к.* Биҙәк ултыртыу (балаҫҡа); биҙәкләү. *Аҫалап һуғыу. Балаҫты аҫалау.*

**АҪАЛЫ** *с.* Биҙәкләп һуғылған. *Аҫалы балаҫ.*

**АҪАУ** *с.* Егелмәгән, ҡырағай./Ярһып торған, уҫал. *Аҫау айғыр.* ■ *Әлек Ҡыҙрас ҡорок ырғытҡанда, аҫау аттар сәсәп сүктеләр.* Р. Бикбаев.

**АҪАУЛАНЫУ** *к.* Аҫауға әйләнеү. *Йылҡылар йәй буйы ирektә йөрөп, аҫауланып киткән.*

**АҪҠАҠ** *и.* Ниҙелер аҫып, элеп ҡуя торған ҡулайлама. *Әҙһәм ҡарт та ҡыуышы алдына ут яғып, аҫҡаҡҡа сәй ҡайнатырға элде.* Ж. Кейекбаев. *[Хәйбулла бабайҙарҙың] һыйыры яҙын күтәртеп, аҫҡаҡта торған ерендә үлде.* Н. Мусин.

**АҪҠЫ** *с.* Аҫ яҡтағы, аҫта урынлашҡан. *Аҫҡы ирен. Аҫҡы теш. Аҫҡы кәштә.* ■ *Пароходтың аҫҡы ҡатында кемдеңдер моңландырып оҙон көйгә гармун уйнап ебәргәне ишетелде.* М. Тажи./Ниҙеңдер түбәнге яғында урынлашҡан. *Аҫҡы урам.*

**АҪҠЫЛЫҠ** *и. диал.* Аҫҡаҡ.

**АҪҠЫМСЫ** *с. диал.* Аҫтыртын.

**АҪҠЫРҒАК** *и. диал.* **Аҡһырғаҡ.**

**АҪҠЫРҒАҠ** *и. диал.* **Аҡһырғаҡ.**

● *Аш һайлама — ҡоҫторор, ҡыҙ һайлама — аҫҡырыр.* Мәҡәл.

**АҪЛЫҠ** *и.* Төрлө нәмәнең аҫтына ҡуя торған ҡулайлама; таҫтаҡ. *Үтек аҫлығы.*

**АҪЛЫ-ӨҪЛӨ** *с.* Аҫты ла, өҫтө лә булған. *// Аҫлы-өҫлө өйөү. Аҫлы-өҫлө һалыу.* ■ *Өй ҡотлап Гөлйөҙөмдөң әсәһе бер кейеҙ, еңгәһе аҫлы--өҫлө ике сынаяҡ .. бүләк итте.* Һ. Дәүләтшина.

**АҪМА** [1] *и.* Ауырлыҡ тағылған оҙон бау (вертикаль йүнәлеште билдәләү өсөн).

**АҪМА** [2] *с.* **1.** Вертикаль йүнәлешле. *Аҫма һыҙыҡ.*

**2.** *кар.* **аҫмалы.**

**АҪМАЛЫ** *с.* Аҫып ҡуймалы. *Аҫмалы шәм. Аҫмалы күпер.* ■ *Бөтә аҫмалы һәм тәкмалы ҡорамалдар көҙҙән үк ремонтлап ҡуйылды.* «Совет Башҡортостаны», 1970, 27 февраль.

**АҪПАТ** *с. диал.* Ыҫпай. *Аҫыл ғына кейер, аҫпат кейер, аҙыраҡ ямғыр яуһа, кер тейер* (Халыҡ йырынан).

**АҪРАЛЫУ** *к. төш. кар.* **аҫрау** [1].

**АҪРАНЫУ** *к. диал.* Бала табыу.

**АҪРАУ** [1] *к.* **1.** Баланы йәки мохтаж кешене ашатып-эсереп тәрбиәләү: ҡарау. *Балалар йорто асылған. Йәтим балаларҙы аҫрайҙар: ашаталар, кейендерәләр, уҡыталар.* З. Биишева.

**2.** Хужалыҡта мал, ҡош-ҡорт тотоу. *Ат аҫрау. Ҡаҙ аҫрау.*

**3.** *күсм.* Һаҡлап тотоу (хәтерҙә күңелдә). *Эргәңдәге үләндәрҙе, сәскәләрҙе, улар өҫтөндә уйнап, осоп йөрөгән күбәләктәрҙе .. ентекләп ҡарайһың. Күп йылдарға, күп ғүмерҙәргә улар-*

*ҙың барыһын да шул көйгә һаклағың, шул көйгә хәтереңдә аҫрағың килә.* Б. Ишемғол.

♦ **Тамаҡ аҫрау** *шул уҡ* **йән аҫрау** (*кар.* **йән** 3). **Ҡуйында йылан аҫрау** *кар.* **ҡуйын.**

**АҪРАУ** [1]: **бала аҫрау** *диал.* бала табыу.

**АҪРАУ** [2] *с.* **1.** Ситтән алып аҫралған. *Аҫрау бала.* ■ *Мулланың малайы ла, аҫрау ҡыҙ ҙа үҫкән. Был ҡыҙ менән малай бер-береһен бик яратҡан* (Әкиәттән).

**2.** *и. мәг.* Хеҙмәтсе ҡатын-ҡыҙ. *Егор ҡарт, өйҙә әбейенә ярҙамсы булмағас, аҫрау алды.* Ж. Кейекбаев.

**АҪТАР** [*гәр.*] *и.* **1.** Кейемдең мамығына эс яҡтан һалынған йоҡа туҡыма. *Аҫтар һалыу.*

**2.** *диал.* Эслек. *Күлдәк аҫтары.* ■ *Түшелдерек аҫтарындай яҡын күрәм үҙеңде* (Халыҡ йырынан).

**АҪТАРЛАУ** *ҡ.* Аҫтарлы итеү, аҫтар ҡуйыу. *Ҡаҙаҡ ҡатын-ҡыҙҙары .. ҡуй йөнөн аҫтарлап көпөләр, ебәк менән тышлап томаҡтар тегә.* Ғ. Ғүмәр.

**АҪТАРЛЫҠ** *и.* **1.** Аҫтарға тәғәйенләнгән туҡыма. *Аҫтарлыҡ бүҙ.*

**2.** *диал. кар.* **аҫтар** 2. *Аҡлы ситса күлдәгемдең аҫтарлығы киндерҙән* (Халыҡ йырынан).

**АҪТЫНА** *бәйл. функцияһында* **1.** Эш-хәлдең нимәләрҙер түбәнге яғына йүнәлеүен белдергәндә ҡулланыла. *Боҙ аҫтына инеү. Аҫтыңа һалыу.*

**2.** Нимәләрҙер йоғонтоһона алыуҙы белдергәндә ҡулланыла. *Һаҡ аҫтына алыу. Күҙәтеү аҫтына әләгеү.*

**АҪТЫНАН** *бәйл. функцияһында* Эш-хәл, хәрәкәттең нимәнеңдер түбәнге өлөшөнән башҡарылыуын белдергәндә ҡулланыла. *Өҫтәл аҫтынан алыу. Һыу аҫтынан сығыу. Аяҡ аҫтынан табыу.*

**АҪТЫНДА** *бәйл. функцияһында* **1.** Нимәнеңдер түбәнге өлөшөндә башҡарылыу, урынлашыуҙы белдергәндә ҡулланыла. *Урындыҡ аҫтында ятыу.*

**2.** Нимәнеңдер тәьҫиренә ҡалыуын белдергәндә ҡулланыла. *Ямғыр аҫтында ҡалыу. Ут аҫтында ҡалыу. Кран аҫтында йыуыныу.*

**3.** Эш-хәлдең сәбәбен белдереү өсөн ҡулланыла; арҡаһында, һөҙөмтәһендә. *Температура тәьҫире аҫтында еҫемдәр киңәйә.*

**4.** Кемдеңдер йәки нимәнеңдер тәьҫирендә, йоғонтоһонда булыуҙы белдергәндә ҡулланыла. *Һаҡ аҫтында тотоу. Күҙәтеү аҫтында булыу.*

**5.** Предметты, затты айырып күрһәткәндә ҡулланыла. *Яңы атама аҫтында биреү.*

**АҪТЫ-ӨҪКӘ: аҫты-өҫкә килеү** ныҡ боларыу, болаға әйләнеү.

● *Ҡәйнәң өйҙә булһа, өйҙөң аҫты-өҫкә килер.* Мәҡәл.

**АҪТЫН-ӨҪКӘ: аҫтын-өҫкә килтереү** ныҡ болартыу, тәртипһеҙ хәлгә килтереү. *Ул [Тимербулат] аҡтарынып өйҙөң аҫтын-өҫкә килтерҙе.* Һ. Дәүләтшина.

**АҪТЫРТЫН** *с.* Уй-ниәтен һиҙҙермәй, йәшерен эш итеүсән. *Аҫтыртын кеше. // Аҫтыртын эшләү.* ■ *Минең эсемдәге тышымда, ә Нуретдин аҫтыртын.* Ғ. Әмири.

● *Аҫтыртын эт өрмәй тешләй.* Мәҡәл.

**АҪТЫРЫУ** *ҡ. йөкм. кар.* **аҫыу.**

● *Аҫтан ҡаҙан аҫтырма.* Мәҡәл.

**АҪЫЛ** *с.* **1.** Бик матур һәм ҡиммәтле; затлы. *Аҫыл кейем.* ■ *Аҫыл алтын сапаплы батша, тиҙәр, Бүгәсәү; аҫыл көмөш эйәрле атта, тиҙәр, Бүгәсәү.* Салауат Юлаев.

**2.** *күсм.* Иң юғары сифатҡа, юғары баһаға эйә булған. *Аҫыл ир.* ■ *Ир кешемен тигән аҫыл егет ил эсендә йөрөмәҫ юҡ менән* (Халыҡ йырынан).

♦ **Аҫыл ҡош** *мыҫҡ.* еңел холоҡло матур ҡатын-ҡыҙға ҡарата әйтелә. **Аҫыл таш** башлыса биҙәү өсөн ҡулланылған, һирәк осрай торған затлы минерал.

● *Аҡыл йәштән сыға, аҫыл нәмә таштан сыға.* Мәҡәл. *Аҫыл таш һыу төбөндә, аҫыл һүҙ күңел төбөндә.* Мәҡәл.

**АҪЫЛЛАНЫУ** *ҡ. шигр.* Аҫылға әйләнеү. *Тау биттәре хәтфә ябынып аҫылланған төндә яуған йылы йомшаҡ ямғыр менән.* С. Ҡудаш.

**АҪЫЛМА** *с. кар.* **аҫмалы.**

**АҪЫЛМАЛЫ** *с. кар.* **аҫмалы.**

**АҪЫЛЫНДЫРЫУ** *ҡ.* Аҫҡа сосратып төшөрөү; һалындырыу. *Аяҡты аҫылындырыу.*

**АҪЫЛЫНЫУ** *ҡ.* **1.** *ҡайт. кар.* **аҫыу** 2.

**2.** Эләгеп, йәбешеп, аҫҡа һалыныу. *Тейен .. аҫылынып, зыр-зыр әйләнеп торҙо ла, ҡарағайҙың башына уҡ менеп китте.* М. Тажи. *Ишек өҫкө күгәненән һурылып, .. аҫылынып тора.* Б. Бикбай.

**АҪЫЛЫУ** *ҡ. төш. кар.* **аҫыу.** *Билгә аҫылған ҡылыс.*

**АҪЫУ** *ҡ.* **1.** Һалындырып тағыу, күтәреп бәйләү. *Утҡа сәйнүк аҫыу.* ■ *Малай бара. Ҡайҙа бара, тоҡсай аҫып арҡаһына?* М. Кәрим. *[Аҡъял батыр] уҡ-һаҙағын алып, үткер булат ҡылысын аҫып, донъя күрергә сығып киткән* (Әкиәттән).

**2.** Муйынына элмәкле бау һалып күтәреү (үлем язаһының бер ысулы). *Аҫып үлтереү.* ■ *[Батша] теге алдаҡсы вәзирҙе аҫырға ҡушҡан, ти* (Әкиәттән).

♦ **Ҡаҙан аҫыу** *кар.* **ҡаҙан.**

**АТ** [1] *и.* Йомро тәяҡлы, ялбыр ҡыл ҡойроҡло, яллы эре йорт хайуаны. *Ерән ат. Ҡара ат. Ҡашҡа ат. Меңге ат. Йөк аты. Эш аты. Ат заводы. Ат һарайы. Ат егеү. Ат менеү. Ат сабыштырыу. Ат ҡарау.* ■ *Илкәйеңдә баҫып яу килгәндә, атҡайыңды менмәй тик ятма* (Халыҡ йырынан). **Ат ҡуныу** (*йәки* **төнләтеү**) төнгөлөккә ҡунып ат көтөү. *Ул [Тимеркәй] эш араһында ла, кис менән туғайға ат ҡуна барғанда ла үҙе тураһында уйлай.* Д. Юлтый. **Ат һыуытыу** юлдан тирләп килгән атты ашатмай, эсермәй, билдәле ваҡытта бәйләп ҡуйыу. **Башҡорт аты** элекке башҡорт аҫраған бәләкәйерәк кәүҙәле, талымһыҙ, әрһеҙ, ныҡ, көслө, бейәһе бик һөтлө йылҡы тоҡомо. **Ғәрәп аты** һыбай йөрөүгә уңайлы, талымһыҙ, әрһеҙ, нәҙек оҙон аяҡлы, бәләкәй башлы етеҙ йылҡы тоҡомо. **Ат башынан алыу** ҡунаҡҡа ҡаршы сығып, атын етәкләү. **Ат башындай** үҙ самаһынан ҙур булған бәләкәй нәмәгә әйтелә. *Ат башындай алтын. Ишеккә ат башындай йоҙаҡ эленгән.* **Ат башында йөрөү** ҡыр эшендә ат йөрөтөү. *Тәүге йылда Камил колхозда эшләне. Ат башында йөрөнә.* Ә. Вәли. **Ат ебәреү**

1) атты яланға ҡыуыу; 2) ат егеп, ҡаршы сығарыу. *[Тәнзилә:] Киткәнде әйтмәй киттек, әллә бәлки ат ебәрерҙәр ине.* М. Тажи. **Ат йөрөтөү** шәп килеп тирләгән атты ҡапыл туҡтатмай алып йөрөү. *Йәштәр .. саналарга тейәлеп, урам буйына ат йөрөтөргә китте.* Ғ. Дәүләтшин. **Ат ҡушаҡлау** һыбай йөрөгәндә алмаш өсөн янга ат етәкләп алыу. *Ат кушаклап сабырҙар фарман алып килгәндә.* М. Буранғолов. **Ат ҡыуыу** ниндәйҙер юлға ат йөрөтөү. *Ҡунак каршыларга ат кыуҙык.*

♦ **Ат борсағы** *шул уҡ* **ҡара борсаҡ** (*кар.* **борсаҡ** 3). **Ат көсө** ҡеүәт үлсәй торған, бер системаға ла инмәгән берәмек. **Ат кеүек** эре һөйәкле, һауһаҡ. **Ат кеүек эшләү** арыуҙы белмәй емереп эшләү. **Ат күҙендәй** 1) үҙ самаһынан бәләкәй булған ҙур нәмәгә әйтелә. *Ат күҙендәй генә каса;* 2) үҙ самаһынан ҙур булған бәләкәй нәмәгә әйтелә. *Ат күҙендәй кубек.* **Ат ҡолонлатыу** оҙон-оҙаҡҡа һуҙыу (һүҙҙе). *Бигерәк тә күп һөйләгән Шакир булды: ул кыҙҙарга беҙҙең төнгө сәйәхәтте ат колонлатып һөйләй ине.* Н. Иҙелбай. **Ат ҡуҙғалағы** *кар.* **атҡолаҡ. Ат менгәндәй булыу** бик ныҡ ҡыуаныу. *Атаһы кайткас, бала ат менгәндәй булды.* **Ат остау** *диал.* бүләк алыр өсөн кейәү атын ебәрмәй тороу.

● *Ат юлда, ир яуҙа һынала.* Мәҡәл. *Ат айгырланһа, үҙ башына була.* Мәҡәл.

**АТ** [2] *и.* **1.** Кешегә ҡушылған исем. *Ат биреү. Атың кем?* ■ *Атаң куйган атың менән аталырһың, хеҙмәтенә карай макталырһың.* Аҡмулла. /*кар.* **атаҡ** [1] 1.

**2.** Яҡшы йәки яман яҡ менән алынған дан. *Яман ат алыу. Якшы ат алыу.* ■ *Алма ат «алдаксы» тип, кәкрене турыла, алдама.* Ш. Бабич.

● *Һагынып баргандың хакы оло, сакырып баргандың аты оло.* Мәҡәл.

**АТА** *и.* **1.** Балаһы булған ир кеше (үҙ балаһына ҡарата). *Ата йорто. Ата малы.* ■ *Кук ыласындың балаһы бауҙа үлә талпынып, якшы атаның балаһы шәһит үлә яу йөрөп.* Салауат Юлаев **Атаһы** ҡатындың үҙ иренә өндәшеү һүҙе. *Кара, кара, атаһы! Кара ниндәй һикерә! Талпынып та йылмайып, һөймәҫ ерҙән һөйҙөрә.* Г. Амантай. **Атаһының балаһы** атаһына эш-ҡылығы менән оҡшаған балаға ҡарата әйтелә. **Бер ата, бер әсә** бер туған.

**2.** *с. мәг.* Ҡайһы бер йән эйәһе һәм үҫемлектәрҙең ир енеслеһе (енес буйынса махсус атамаһы булмағанда). *Ата айыу. Ата бесәй. Ата бүре. Ата дөйә. Ата каҙ. Ата куян. Ата суска. Ата сәскә.*

**3.** *с. мәг.* Билдәле бер сифаты бик ныҡ көслө; бик, үтә. *Ата карак.* ■ *Беҙҙә лә йыйын ялкауҙар бит, Якуп дуҫ, ата ялкауҙар. Ошогаса эшкә сыкмаһындар әле, ә?* Б. Бикбай.

♦ **Ата балаһы** *кар.* **бала. Ата йорт** 1) ҡатын-ҡыҙҙың тыуып үҫкән ауылы; 2) тыуған ил, ватан. **Аталарының малы уртаҡмы әллә** тынышмай йәшәгән кешеләргә ҡарата әйтелә. **Атам иркәһеме ни** *кар.* **иркә. Атаң башы!** әрләгәндә, орошҡанда әйтелә. *[Агалары — Биктимергә:] Беҙ килмәһәк, мәңге йоклар инең әле, атаң башы!* (Әкиәттән). **Ата улды, инә ҡыҙҙы белмәй** һис бер тәртип булмағанда әйтелә. *[Ямал:] Тыштан гына колхоз инде, ә эсенән кырк ямау, илле сөй. Ата улды, инә кыҙҙы белмәй.* М. Тажи. **Ата һөйәге** *диал.* ҡумәгәй. **Атаһын күргәндәй булыу** бик ныҡ шатланыу. **Атаһын танытыу** эшен килтереп әрләү йәки туҡмау. *[Сәхип — Низамга:] Өтөк! Мин һинең атаңды танытайым әле, вон бынан сыгып кит!* М. Тажи. **Буштың атаһы үлгән** ниҙеләр буш бирергә теләмәгәндә әйтелә. *[Ҡарыя — Рахмайга:] Буштың атаһы үлгән ул, ашаган хакыңа түләп кит!* К. Кинйәбулатова. **Ете атаһына етеү** кешене ата-бабаһын ҡушып әрләү. **Ҡырҡ ата балаһы** төрлө ерҙән йыйылған төрлө кеше. *[Укытыусының] кулында кырк ата балаһы тупланган, кыркына кырк төрлө көй кәрәк.* «Совет Башҡортостаны», 1965, 7 март.

● *Атанан бала тыуһа ине, ата юлын кыуһа ине.* Мәҡәл.

**АТА-БАБА** *и. йыйн.* Элекке оло быуындар; *Ата-баба йолаһы. Ата-бабанан калган гәҙәт.* ■ *Үҙ илкәйҙәрем бигерәк якын, ата-бабам шунда тыуганга* (Халыҡ йырынан).

**АТАВИЗМ** [*рус.* ⟨ *лат.* ] *и.* Тереклек һәм үҫемлектәрҙәге бик борон булған билдәләрҙең яңынан килеп сығыу күренеше.

**АТА-ИНӘ** *и. кар.* **ата-әсә.**

● *Ата-инәң кәҙерен балалы булгас белерһең.* Мәҡәл.

**АТАЙ** *и.* **1.** *кар.* **ата 1.** *Ҡоштар гына осоп етләҫ ергә биргән икән мине атайым* (Сеңләүҙән).

**2.** Кешенең үҙ атаһына өндәшеү. *Атай, миңә ат кәрәк, атыр өсөн уҡ кәрәк* (Әкиәттән).

● *Атайҙан йәш калдым, акылдан буш калдым.* Мәҡәл.

**АТАЙҘАУЫС** *и. диал. кар.* **ҡыҙылтүш** 1.

**АТАЙМАҠТАҒЫ** *с. диал.* Бик күптәнге, әллә ҡасанғы, боронғо.

**АТАЙ-ӘСӘЙ** *и. йыйн. кар.* **ата-әсә.**

**АТА́КА** [*рус.* ⟨ *фр.*] *и.* Ғәскәрҙең дошманға ҡаршы ҡапыл күтәрелгән киҫкен һөжүме. *Атакага ташланыу. Атака яһау.*

**АТАКАЛАНЫУ** *к. төш. кар.* **атакалау.**

**АТАКАЛАУ** *к.* Атака яһау. *Дошман позицияларын атакалау.*

**АТАҠ** [1] *и.* **1.** Кешегә тағылған исем; ләҡәп.

**2.** Кемдер тураһында таралған хәбәр; дан. *Атак сыгыу.* ■ *Калһын исемең мәңгегә, ысын һүҙ менән ал атак!* Ш. Бабич.

**АТАҠ** [2] *ымл.* Ғәжәпләнгәндә, аптырағанда әйтелә.— *Атак, ни һөйләйһең, балакайым? Беҙ кешенән кәм торабыҙҙыр шул.* Т. Йәнәби.— *Атак-атак! Был бисәләрҙе ни эшләп сходка йыялар тагы?!* Б. Ишемғол.

**АТАҠЛЫ** *с.* Илгә исеме танылған! данлы. *Атаклы галим. Атаклы йырсы.* ■ *[Карт:] Мин үҙем дә йәш сагымда атаклы батырҙарҙан инем.* М. Кәрим.

● *Атаклы бур астан үлгән.* Мәҡәл.

**АТАҠТАЙ** *с. диал.* Уҫлаптай.

**АТАЛАМА** *и. диал.* Ирәк.

**АТАЛАНДЫРЫЛЫУ** *к. төш. кар.* **аталандырыу.**

**АТАЛАНДЫРЫУ** *к.* Ата енес күҙәнәге менән ҡауыштырыу. *Яһалма рәүештә аталандырыу.*

**АТАЛАНЫУ** *к.* **1.** Ата енес күҙәнәге ҡабул итеү (инә енескә ҡарата).

**2.** *диал.* Аташланыу.

**АТАЛАШ** *с.* Ата бер, инә башҡа. *Аталаш апай. Аталаш ҡусты.*

**АТАЛҒЫ** *и.* **1.** Киле, ялғаш кеүек нәмәнең эсен юна торған йомро йышҡы.

**2.** *диал.* Бағау.

**АТАЛЫ** *с.* **1.** Атаһы булған, атаһы бар. *Аталы бала.*

**2.** Ата енесенә ҡауышҡан; аталанған. *Аталы йомортҡа.*

**АТАЛЫҠ** *и.* **1.** Ҡайһы бер ҡош-ҡорт һәм үҫемлектәрҙең ата енеслеһе. *Ҡаҙҙың аталығы. Өйрәктең аталығы.*

**2.** Ата енесле. *Аталыҡ күҙәнәк.*

**АТАЛЫ-ҠЫҘЛЫ** *р.* Атаһы менән ҡыҙы бергә. *Улар аталы-ҡыҙлы бөтә яҙ, йәй, көҙ буйына эшләне.* Һ. Дәүләтшина.

**АТАЛЫУ** *к. төш. ҡар.* **атау** [1].

**АТАЛЫ-УЛЛЫ** *р.* Атаһы менән улы бергә. *Аталы-уллы һунар итеү.*

**АТАМА** [1] *и.* Ниҙеңдер үҙенә бәйләп ҡушҡан исем. *Ер-һыу атамалары. Халыҡ атамаһы.*

◆ **Атама һөйләм** *грам.* баш киҫәге төп килештәге исем менән белдерелгән номинатив һөйләмдәрҙең бер төрө.

**АТАМА** [2] *с.* Бер кешенең үҙенә исемләнгән; исемле *[Таҙ — ханға:] Ханым, ҡулыңдағы атама балдағыңды бир.* «Маҡтымһылыу».

◆ **Атама исем** ҡушамат, псевдоним.

**АТАМА́Н** [*рус.*] *и.* **1.** Башҡаларға өҫтөнлөк иткән кеше; башлыҡ. *Ер һатыуға атамандар аһ орҙо* (Бәйеттән).

**2.** Революцияға тиклемге атлы ҡазаҡтарҙа: ғәскәр һәм ауыл башлығы. *Атаман булыу. Атаман итеү.* ■ *Беренсе башҡорт атлылар полкы.. ҡазаҡтар корпусы[нда] була.* «Совет Башҡортостаны», 1965, 15 июнь.

**АТАН** *и.* **1.** Тоҡом өсөн тотолған айғыр дөйә. *[Маҡтымһылыу] йылҡы өйөрөнә бара — айғырҙы сәнсеп йыға, дөйә көтөүенә бара — атанды сәнсеп йыға, ҡуй көтөүенә бара — ҡусҡарҙы сәнсеп йыға.* «Маҡтымһылыу».

**2.** *диал.* Дөйәнең тәүге балаһы.

◆ **Атан үгеҙ** тоҡом үгеҙе.

**АТА-ОЛАТАЙ** *и. йыйн. ҡар.* **ата-баба.** *Күгәреп тә ятҡан ай күк Урал ата-олатайҙарҙың төйәге* (Халыҡ йырынан).

**АТ-АРБА** *и. йыйн.* Ат менән арба һәм егеү ҡоралдары. *Аты-арбаһы менән һау ғына ҡайтһын инде.*

**АТАРЪЯН** *и.* Эре ялан сиңерткәһе; айыу сиңерткәһе.

**АТАС** *с.* Төҫө, холоҡ-ҡылығы менән атаһына ныҡ оҡшаш (балаға ҡарата). *[Шәрифә әбей — Тимербулатҡа:] Атас, был тиклем үҙ һүҙле булырһың икән.* Һ. Дәүләтшина.

**АТАТЫУ** *к. йөкм. ҡар. атау* [1] 1. *Исем ататыу.*

**АТАУ** [1] *к.* **1.** Кешегә йәки бер нәмәгә исем ҡушыу; исемләү. *Исем атау.* ■ *Йылғаны Һоябикә хөрмәтенә һоя тип, ә ауылды уның ҡарты хөрмәтенә Ишәле тип атағандар, ти* (Әкиәттән). /Кешегә ҡушамат, ләҡәп тағыу. *Теге уҡытыусыны ла башта «иптәш» тип йөрөнөләр, һуңынан «бәндә» тип аталылар.* С. Агиш.

**2.** Кешенең йәки хәл-ваҡиғаның төп сифатын билдәләп әйтеү. *Ҡәмәр ҡортҡаны донъяла беренсе яуыз тип атаһаң да бер нәмә булмаҫ.* Т. Йәнәби.

**3.** Кешене йәки нәмәне исеме менән әйтеү. *Фатима берәм-берәм нәмәләрҙе атап тора, ә Яҡуп яҙа [бара].* Б. Бикбай.

**4.** Берәй нәмәне кеше исеменә алдан әйтеп тәғәйенләү; инселәү. *Атап биреү. Атап ҡуйыу.* ■ *Ҡотлогилденең эсәһе килгәндә атап әйткән юрған, яҫтыҡ һәм кейемдәрен — барыһын да килтергәйне.* Ж. Кейекбаев. /Берәй эште кемгәлер арнау. *Гөл үҫтергән эсә-апайҙарға атап яҙҙым ошо йырҙы мин.* Ғ. Ғүмәр.

◆ **Атап әйткәндә** *инш.* дөйөм һүҙҙе сисеп, асыҡлаған саҡта ҡулланыла.

**АТАУ** [2] *и. диал.* **1.** Утрау.

**2.** Аҡлан.

**АТАШ** *с.* **1.** Аҡрайып торған; аҡыш. *Күҙеңбашың ҡыйшайып, аташ күҙең әйләнеп, кемгә тейереңде белмәйһең .., ҡорсаңғы!* Ш. Шәһәр.

**2.** Кешенең күҙенә инеп килеүсән һөмһөҙ кешене әрләп, яманлап әйтелә.— *Бөгөн Яҡуп эшкә сыҡманы,— тине [карт әбейгә]. Әйтеүенә ҡарағанда, анау аташтар тирәһенә китмәгәйе..* В. Исхаҡов.

**АТАШЛАНЫУ** *к.* Аҡ-ҡараны күрмәй, һөмһөҙләнеп, тапарҙай булып килеү. *Аташланып йөрөү.*

**АТАШЫУ** *к. диал.* Уҙаҡлашыу.

**АТА-ӘСӘ** *и. йыйн.* Ата менән әсә (үҙ балаларына ҡарата). *Ата-әсәле бала. Ата-әсәләр йыйылышы. Ата-әсәләр комитеты.* ■ *Арыҫлангәле лә ата-әсәһен һау күреп ҡыуанғанлығынан аҙ ғына күҙ йәшен сығарып алды.* Ғ. Дәүләтшин.

**АТБАШ: атбаш балыҡ** *ҡар.* **балыҡ.**

**АТЕИЗМ** [*рус.* ⟨ *фр.*] *и.* Алланы, диндә кире ҡаҡҡан ҡараш; аллаһыҙлыҡ. *Атеизм тыңәрәге.*

**АТЕИСТ** [*рус.*] *и.* Динһеҙ, аллаһыҙ кеше. *Атеист итеп тәрбиәләү.*

**АТЕИСТИК** *с.* Атеизм йүнәлешендәге. *Атеистик ҡараш. Атеистик тәрбиә. Атеистик эш.*

**АТЕЛЬЕ́** [*рус.* ⟨ *фр.*] *и.* Кейем, аяҡ кейеме һ. б. тектерә, көнкүреш нәмәләрен йүнәттерә торған мастерской. *Тегеү ательеһы. Телевизион ателье.*

**АТЕРОСКЛЕРО́З** [*рус.* ⟨ *гр.*] *и. мед.* Ҡан тамырҙары ҡалынайып ҡатыуҙан килгән ауырыу.

**АТКҮҘ** *и. диал.* Бәләкәй туҫтаҡ.

**АТҠАҘАНҒАН** *с.* Хеҙмәте менән дан алған. *Ҡуҙабайҙың йырсыһы — илдә атҡаҙанған бер кеше.* Т. Хәйбуллин./Фән, сәнғәт, спорт һ. б. өлкәләрҙә бик яҡшы хеҙмәт өсөн хөкүмәт тарафынан бирелә торған маҡтаулы исем составында ҡулланыла. *Республиканың атҡаҙанған артисы. Атҡаҙанған врач. Атҡаҙанған уҡытыусы. Атҡаҙанған механизатор. Атҡаҙанған фән эшмәкәре.*

**АТҠАРМА** *и. иҫк.* Президиум.

**АТҠАРЫЛЫУ** *к. төш. ҡар.* **атҡарыу.**

**АТҠАРЫУ** *к.* **1.** Эш, бурысты еренә еткереү; үтәү, башҡарыу. *Бүре күҙле яуыздың, йотоҡҡан*

*ҡанлы ауыҙҙың яҡ һөйәген актарҙыҡ, ил приказын атҡарҙыҡ.* Р. Ниғмәти.

**2.** Ойоштороу, уҙғарыу. *Туй атҡарыу. Мәжлес атҡарыу. Һабантуй атҡарыу.*

**3.** Билдәле ваҡытты нисектер үткәреү, йәшәп уҙғарыу. *Көн атҡарыу.* ■ *Берәү шуны гел-гел тылҡып торҙо, шуны һөйләп ғүмер атҡарҙы.* С. Әлибаев.

**4.** Тәғәйенләнгән ергә ебәреү; оҙатыу.— *Аллаһы әкбәр, аҙбарҙа ат бар, артта тишек бар, тишектән атҡар,— тигән ти атаһы улына, доға ҡылған кеше булып (Көләмәстән).*

♦ **Бойомға атҡарыу** *шул уҡ* **тормошҡа ашырыу** (*кар.* **тормош**).

● *Күнәкләгән кунаҡ атҡарған, күмәкләгән яу ҡайтарған.* Мәҡәл.

**АТҠАРЫШЫУ** *к. урт. ярҙамл. кар.* **атҡарыу** 1, 2. *Туй атҡарышыу.*

**АТҠАТАШ** *и. диал.* Бишташ.

**АТҠАЯҠ** *и. диал.* Атҡый.

**АТҠОЛАҠ** *и.* Оҙонсараҡ киң япраҡлы, оҙон яланғас һабаҡлы, көрәнерәк суҡ орлоҡло ҡыр үләне.

**АТҠЫ** *и. диал.* Атҡый.

**АТҠЫЙ** *и.* Таяҡ осонан һелтәп осора торған туҙ ҡанатлы ҡыҫҡа уҡ. *Атҡыйҙан йөрөк уҡ булмаҫ* (Ҡобайырҙан).

**АТҠЫРСАҠ** *и. диал.* Атҡый.

**АТҠЫС** [1] *и.* Бик оҫта атҡан кеше. *Килдекәй заманында тиңһеҙ атҡыс булған, осоп барған ҡарағошто бер уҡ менән атып алған* (Әкиәттән).

**АТҠЫС** [2] *и. кар.* **атҡый.**

**АТҠЫС** [3]: **атҡыс емеш** аҡһыл йомро сәскәле орлоғо шартлап асыла торған үлән.

**АТЛАМ** *и.* **1.** Аяҡ атлаған хәрәкәт; аяҡ баҫымы, аҙым. *Юҡ, йоҡламай, һәр атламым һайын мин хис итәм уны (Ленинды) эргәмдә* Р. Ниғмәти.

**2.** Атлағандағы ике аяҡ араһы ер; аҙым. *Келәт менән өй араһы аяҡ атламы ғына ер ине.* Ж. Кейекбаев.

**АТЛАМА** [1] *и.* **1.** Аша һалып ике осо ҡағыла торған кәкре тимер (ағас нәмәләрҙе нығытып тоташтырыу өсөн). *Атлама ҡағыу. Атлама һалыу.*

**2.** Кәмәнең һыҙлыҡ сүбәге өҫтөнән ҡағылған буй ҡалай.

**АТЛАМА** [2] *и. диал.* **1.** *кар.* **асамай** [1].

**2.** Башағас.

**АТЛАМЛЫ** *с.* Аҙымы ырамлы, аҙымлы, йөрөшлө. *Атламлы ат. Атламлы дөйә.*

**АТЛАНДЫРЫУ** *к.* **1.** Һыңар аяғын аша һалдырып ултыртыу. *Бүкәнгә атландырыу.*

**2.** Менге мал өҫтөнә ултыртыу, мендереү. *Атҡа атландырыу.*

♦ **Ағас атҡа атландырыу** бик оҫта итеп алдау; һәмәйтеү.

**АТЛАНЫУ** *к.* **1.** Һыңар аяҡты аша һалыу. *Хисбулла бүкәнгә атланып ултырып алған да, бик тырышып бысаҡ ҡайрай.* З. Биишева.

**2.** Менге малдың өҫтөнә ултырыу; менеү. *Дошмандан илен ҡурсыған, эйәрләп атҡа атланған, ажғырып яуға ташланған — илдең батыры шул булыр, илдең күрке шул булыр.* С. Юлаев.

**АТЛА́С** [*ғәр.*] *и.* Уң яғы ялтырап торған ебәк туҡыма. // *Атлас елән. Атлас күлдәк. Атлас юрған.* ■ *Таңһылыу сиккән атласын стенаға элеп ҡуйҙы.* Ғ. Ғүмәр.

● *Атлас һыуға батмаҫ.* Әйтем.

**А́ТЛАС** [*рус.* ⟨ *гр.*] *и.* Географик карталар йыйынтағы. *Донъя атласы. Советтар Союзы атлаҫы.*/Картаға төшөрөлгән төрлө мәғлүмәттәр йыйынтығы. *Диалектологик атлас. Тимер юлдар атласы.*

**АТЛАТЫУ** *к.* **1.** *йөкм. кар.* **атлау.** *Беҙҙе бик ҡыҙыу атлаталар, һис бер урында туҡтатмайҙар.* Д. Юлтый.

**2.** Юрттырмай, аҙымлатып йөрөтөү. *Аттарҙы атлатып ҡына ауылға йүнәләбеҙ.* Р. Низамов.

**АТЛАУ** *к.* Аҙымлап хәрәкәт итеү. *Шәп атлау. Әкрен атлау.* ■ *Сәйҙел дә шул, Зәйнәбен оҙатҡас, ҡалаға атланы яй ғына.* Ғ. Сәләм. **Аша атлау** ниҙәндер аша баҫыу. *Бүрәнәне аша атлау. Соҡорҙо аша атлап сығыу.* **Аяҡ атлау** яҙым яһау./*күсм.* Эш, тормош юлынан хәрәкәт итеү; барыу. *Ҙур колхоз бөтөнләй икенсе темп менән алға атланы.* Ә. Бикчәнтәев.

♦ **Атлаған һайын** туҡтауһыҙ, гел генә, аҙым һайын. **Баштан атлау** кемделер аша үтеп, өҫтөнлөк алыу.— *Өҫтөмә килепторол, башымдан атламаҡ булаһыңмы?* Т. Хәйбуллин. **Ике аяҡтың береһен атламау** *кар.* **аяҡ** [1].

**АТЛЕ́Т** [рус. ⟨ *гр.*] *и.* Атлетика менән шөғөлләнгән спортсмен. *Ауыр атлет. Еңел атлет.*/Ныҡлы, көслө кеше.

**АТЛЕТИК** *с.* Атлеттарға хас. *Атлетик көс. Атлетик кәүҙә.*

**АТЛЕ́ТИКА** [*рус.* ⟨ *гр.*] *и.* Көс, сыҙамлылыҡ, етеҙлек талап иткән күнекмәләр йыйылмаһы. *Ауыр атлетика.*

**АТЛЫ** *с.* **1.** Аты булған, ат тотҡан.

**2.** Ат менән йөрөгән. *Атлы ғәскәр. Атлы дивизия. Атлы милиция.* ■ *Инде сыкты атлылар, унда-бында саптылар.* Ш. Бабич.

♦ **Атлы кнлеп йәйәү ҡайтыу** буш ҡул менән ҡайтыу. **Атлы казаҡ** 18 быуаттан Россияла ил сиге буйындағы хәрби крәҫтиәндәр вәкиле.

**АТЛЫҒЫУ** (атлыҡғ) *к.* **1.** Ҙур тиҙлек менән алға ынтылыу. *Берәү алға сыкты атлығып. Был ҡаһарман — ғәскәр башлығы.* М. Кәрим.

**2.** Ниҙендер эсенән тышҡа бәреү; атылыу. *Ике бөртөк йәшем күҙҙәремдән сыкһа атлығып, береһе уның һине һөйөү булыр, береһе булыр еңеү шатлығы.* Р. Ниғмәти.

**3.** *күсм. Ҙур теләк менән ярһыу. Йәштәрҙең фермаға эшкә килергә атлығып тороуы бер ҙә ғәжәп түгел.* Р. Солтангәрәев.

**АТЛЫҠСА** *и.* **1.** Ат ҡуя торған һарай. *Нурый бабай сыкмай атлыксанан, көнө-төнө шунда ат ҡарай.* Б. Ишемғол.

**2.** *диал.* Утлыҡса.

**АТЛЫ-ТУНЛЫ** *с. һөйл.* Донъя көтөр мал-мөлкәтле; хәлле. *Атлы-тунлы кеше.*

**АТМА** *и. диал.* Сүмес ау.

**АТМАЛАТЫУ** *к.* Оҙон-оҙон һикертеп атлатыу. *Таяҡты атмалатыу.*

**АТМАЛАУ** *к.* Оҙон-оҙон һикереп атлау.

**АТМОСФЕ́РА** [*рус.* ⟨ *гр.*] *и.* **1.** Ер шарын һәм ҡайһы бер планеталарҙы солғап алған ғаз хәлендәге ҡатлам.

**2.** *физ., тех.* Газ һымаҡ нәмәләрҙең баҫымын үлсәү бермәге.

**3.** *күсм.* Йәмғиәттә, тормошта хөкөм һөргән шарт. *Ижади атмосфера.* ■ *Мәжит Ғафури беҙҙең театрҙағы атмосфераны белеп торған икән.* Ғ. Минһажев.

**А́ТОМ** [рус. ⟨ *гр.* ] *и.* Химик элементтың химик сифаттарын һаҡлаған иң бәләкәй өлөшсәһе. *Атом төҙөлөшө. Атомды тарҡатыу. Атом ауырлығы. Атом ядроһы. Атом энергияһы.* **Инәүле атом** радиоактивлығы һәм химик берекмәһе менән башҡаларынан айырылып торған атом.

♦ **Атом бомбаһы** атомдың ядро энергияһы нигеҙендә ҙур шартлау көсөнә эйә булған бомба. **Атом электр станцияһы** атом энергияһы нигеҙендә эшләгән электр станцияһы.

**АТОМАР** [*рус.* атомарный] *с. махс.* Молекулаға берекмәй, айырым атом хәлендә булған. *Атомар кислород.*

**АТОМОХО́Д** [*рус.*] *и.* Атом двигателе менән йөрөгән карап. *Боҙ ҡыйратып атомоход уҙа, байраҡ итеп Ленин исемен.* М. Марат.

**АТРАҢЛАУ** *ҡ. диал.* Аташланыу.

**АТРАСМАН** *и. диал.* Һары умырҙыҡ.

**АТРАУ** *и. диал.* Утрау.

**АТРАФ** [*ғәр.*] *и. иҫк.* Ниҙеңдер яҡын тирә-яғы; тирә-йүн. *Ҡараһаң атрафҡа — хәтфә кеүек йәмйәшел ялан.* С. Яҡшығолов.

**АТРИБУ́Т** [*рус.* ⟨ *лат.*] *и.* **1.** *филос.* Нәмәнең, күренештең иң төп даими билдәһе. *Хәрәкәт — материяның атрибуты.*

**2.** Нимәгәлер ғәҙәттә хас булған билдә. *Иң алыҫ районддарҙа ла хәҙер урындыҡ кеүек элекке атрибуттар урынына өҫтәл, карауат кеүек яңы нәмәләр ингән.* К. Мәргән.

**АТРОПИ́Н** [*рус.* ⟨ *лат.*] *и.* Тилбәрән һ. б. шуның кеүек үләндәрҙең орлоғонан алынған ағыулы матдә (медицинала ауыртҡанды баҫыр өсөн ҡулланыла).

**АТРОФИ́Я** [*рус.* ⟨ *гр.* ] *и.* Берәй ағзаның туҡланышы боҙолоу йәки оҙаҡ хәрәкәтһеҙ тороу арҡаһында ҡороуы, эшлектән сығыуы.

**АТСАБАР** *и. иҫк.* Хәрби башлыҡтың йомошон үтәп, янында йөрөгән һалдат.

**АТСЫ** *и.* Ат ҡараусы. *[Биктимер:] Бына атсылар бик насар бит, Дәүләтбай ағай!.. Эсәләр, малдарын ҡарамайҙар, үҙ аттарын ғына тәрбиәләйҙер.* Б. Ишемғол.

**АТТАШЕ́** [*рус.* ⟨ *фр.* ] *и.* Дипломатик вәкәләттә берәй өлкә буйынса белгес-кәңәшсе булып эш алып барған рәсми кеше. *Хәрби атташе. Сауҙа атташеһы.*/Кесе дипломатик ранг.

**АТТЕСТА́Т** [*рус.* ⟨ *лат.*] *и.* **1.** Уҡыу йортон тамамлау хаҡындағы рәсми документ./Ғилми йәки маҡтаулы исем биреләү хаҡындағы танытма. *Профессор аттестаты.*

**2.** Хәрби хеҙмәткәрҙәргә тәьмин хоҡуғы бирә торған документ.

**АТТЕСТА́ЦИЯ** [*рус.* ⟨ *лат.* ] *и.* Кешенең эшенә бирелгән рәсми баһа. *Аттестация үткәреү.*

**АТТРАКЦИО́Н** [*рус.* ⟨ *фр.*] *и.* **1.** Цирк йәки эстрада программаһындағы ныҡ тәьҫирле номер.

**2.** Халыҡ ял итә торған урындарҙағы төрлө тамаша һәм уйын.

**АТ-ТУН** *и. йыйн.* Эш һәм хеҙмәт өсөн кәрәк булған ат һәм кейем-ҡорамал. *Бөтә халыҡ яуға китергә тип уҡ-һаҙағын, ат-тунын әҙерләй башлаған* (Йыр тарихынан). *[Иркәбай:] Аты-туны булғандарҙың ҡайһылары баярға көлтә ташырға китте.* А. Таһиров.

**АТТЫРЫУ** *ҡ. йөкм. ҡар.* **атыу** 2.

♦ **Таң аттырыу** *ҡар* **таң** [1].

**АТ-УЖА** *и. йыйн.* Төрлө мөлкәт; мал-мөлкәт. *Ул кеше бер төн эсендә ат-ужаһы менән юҡ булған.*

**АТЫЙ** *и. диал. ҡар.* **атай** 2.

**АТЫЛМАҠ** *и. диал. ҡар.* **сәңгелдәк** 2.

**АТЫЛЫУ** *ҡ* **1.** *төш. ҡар.* **атыу.** *Атылған уҡ.*

**2.** Ниҙеңдер эсенән тышҡа бәреү; атлығыу. *Атылып йәш сыға. Маңлайҙан тир атыла.* ■ *Бармаҡ араларынан атылып сыҡҡан ҡан [Тарастың] беләге буйлап аҡты.* И. Насыри.

**3.** Ҙур тиҙлек менән алға ынтылыу; атлығыу, ташланыу. *Гөлсөм Ҡасимдың ҡул аҫтынан шыуып сыҡты ла тышҡа атылды.* Н. Мусин.

**4.** *күсм.* Ҙур теләк менән ярһып ынтылыу; атлығыу. *Эш өсөн атылып тороу.* ■ *Түҙемһеҙ мин, хатың аҫҡан сакта, атылып сығыр кеүек был йөрәк.* М. Хәй.

**АТЫМ: уҡ атымы** атҡан уҡ етерлек ара. *Уҡ атымы ер.*

**АТЫНДЫРЫУ** *ҡ. диал.* Бәүелтеү.

**АТЫНЫУ** *ҡ. диал. ҡар.* **бәүелеү** 1.

**АТЫРЫҠТАУ** *ҡ. диал.* Аш талымлау.

**АТЫУ** *ҡ.* **1.** Көс менән һелтәп ырғытыу; бәреү. *Таш [менән] атыу.* ■ *Диңгеҙ шаулап тау-тау тулҡындарын ата ине.* И. Насыри. **Атып бәреү** көс менән ситкә ташлау. *Фуражкамды атып бәреп [атымдың] ялына ятып иланым.* Б. Ишемғол.

**2.** Ҡоралдың уҡ-яһағын осортоу. *Туп атыу. Уҡ атыу. Мылтыҡ[тан] атыу.* ■ *Йөрәгеңә атҡан дошман уғын тәнем ҡаплар минең, уҙғармаҫ.* Р. Ниғмәти./Яһаҡлы ҡорал менән үлтереү. *Атаһын аҡтар атып киткән сакта Тимергә һигеҙ йәш тә юҡ ине әле.* Б. Бикбай.

**3.** Тейеп, һуғып көс менән зарарлау (йәшенгә ҡарата). *Йәшен атты.*

♦ **Йән атыу** *ҡар.* **йән. Күҙендә уғы булһа, атып йығыр ине** бик асыулы кешегә ҡарата әйтелә. **Сәскә атыу** *ҡар.* **сәскә. Таң атыу** *ҡар.* **таң** [1]. **Тәкмәс атыу** *ҡар.* **тәкмәс. Эйәк атыу** *ҡар.* **эйәк.**

**АТЫ-УТЫ: аты-уты менән** бөтә булған малмөлкәте менән. *Аты-уты менән күсеп киткән.*

**АТЫШ** *и.* **1.** Ҡара-ҡаршы барған атыуҙар. *Беҙ немец окоптарына бәреп ингәс, атыш .. тынды.* Д. Юлтый.

**2.** Атыу буйынса үткәрелгән ярыш. *Балдаҡ атышта Байғубәк беренселекте, Көтөр ҡыҙы икенселекте ала.* «Таштуғай».

**АТЫШЫУ** *ҡ. урт. ҡар.* **атыу** 1, 2. *Уҡ атышып уйнау.* ■ *Бер-беребеҙҙе күргәс инде, атышырға башланыҡ* (Бәйеттән).

**АТЫ-ЮЛЫ: аты-юлы юҡ** эҙһеҙ юғалған кешегә ҡарата әйтелә.

**АУ** [1] *и.* **1.** Ҡош, йәнлек тота торған селтәр рәүешендәге төрлө ҡорал. *Ҡош ауы. Сүмес ау. Ау ҡороу. Ауға эләгеү.*

**2.** Ептән оҙон, киң итеп үрелгән өс ҡатлы балыҡ тотоу ҡоралы (һыуҙың иңенә ҡороп ҡуйыла). *Ваҡ ау. Эре ау. Сабаҡ ауы. Суртан ауы. Ау бәйләү. Ау ултырғыу.* ■ *Агиҙелкәйҙәргә ауҙар һалдым аҡ балыҡкай менән сазанға* (Халыҡ йырынан). **Аналы ау** өс ҡат ау. **Ау таҡтаһы** ау бәйләгәндә ҡулланылған ҡорал.

**3.** (*йәки* **үрмәксе ауы**) Үрмәксе үргән еп. *Мәсеттең тәҙрәләрен саң баҫты, үрмәкселәр, уңайлы урын һайлап, ау ҡорҙолар.* И. Көҫәнҡол. *Тышта, ҡояшта ялтырап, оса үрмәксе ауы.* Р. Ниғмәти.

**4.** *күсм.* Яуызлыҡ менән уйланған хәйлә, мәкер. *Ау ҡороу. Ауға эләгеү.*

**АУ** [2] *и.* **1.** Йәнлек тотоу шөғөлө, һунар. *Ауға сығыу.*

**2.** *иҫк.* Тотола торған йәнлек. *Мәсем хан ғәскәр менән ауға сыҡҡан, ау эҙләп, бейек-бейек тауға сыҡҡан.* «Бабсаҡ менән Күсәк»

● *Арыҫлан ау тапмай ҡайтмаҫ.* Мәҡәл. *Ауға барһаң, зирәк бул, юлдашыңа терәк бул.* Әйтем.

**АУ** [3] *ымл.* **1.** Үҙ-ара саҡырып тауыш биргәндә әйтелә. *Ау ҙа ау ҡысҡырыу. Ау! Ҡайҙа киттегеҙ?*

**2.** Йыр, ҡобайырҙа үлсәм йәки көй өсөн ҡушып ебәрелә. *Ҡайҙа ла ғына барһаң, ау дуҫ-иш кәрәк* (Халыҡ йырынан). *Ир-егеттең ҡылғаны илдән башҡа була алмаҫ ау, илдән башҡа була алмаҫ* (Ҡобайырҙан).

**АУА** *и. диал.* Һауа.

**АУАЗ** [*фарс.*] *и. кит.* Өн, тауыш. *Ауаз биреү. Ауаз һалыу.* ■ *Сәс ғәйрәтең дошман сафтарына, ауаздарың ашһын асманға!* Д. Юлтый. *Көмөш ауаз түкте һандуғас.* С. Кулибай.

**АУАЗДАШ** *с.* **1.** *кит.* Оҡшаш тауышлы.

**2.** *күсм.* Оҡшаш тәбиғәтле, оҡшаш йөкмәткеле. *«Ҡара йөҙҙәр» иҫке тормошто фашлауы менән генә түгел, кешенең бәхет хоҡуғын раҫлауы менән беҙҙең заманға ауаздаш.* М. Минһажетдинов.

**АУАЗЛАУ** *ҡ. кит.* Тауыш биреү, ҡысҡырыу.

**АУАЛАУ** *ҡ.* Юғары күтәрелеү; үрләү. *Ҡояш ауалағанса йоҡлау.* ■ *Ҡарт тирәктең .. күккә ауалаған ботаҡтары бәүелеп тауыш бирҙе.* Ш. Янбаев.

**АУАН** *с.* **1.** Хәйләһеҙ, ихлас. *Ауан кеше. Эшкә ауан.*

**2.** Айыш-тойошто бик белмәгән; алабарман. [*Кадир:*] *Был эштә инде, Фатима, мин ауан кеше, ул ягын үҙең ҡара.* Б. Бикбай.

**АУАРА** [*фарс.*] *с.* Уйлау, әмәл, сара табыу һәләтенән мәхрүм; аптырашлы, аңҡы-тиңке. *Ауара булыу. Ауара итеү.* ■ *Фәхриҙе был хәбәр бөтөнләй ауара яһаны.* Б. Бикбай.

**АУАРАЛАНДЫРЫУ** *ҡ.* Ауараға әйләндереү, ауара итеү. *Елбәҙәк ҡыҙҙың күңелен ауараландырырға күп кәрәкме ни?* Н. Мусин.

**АУАРАЛАНЫУ** *ҡ.* Ауара булыу. *Сөнгәт .. башын ҡайҙа ҡуйырға белмәй ауараланып йөрөнө-йөрөнө лә тышҡа сығып китте.* Ҡ. Ибәтуллин.

**АУА-ТҮНӘ** *р.* Бер ауып, бер тороп; ауып-ауып китер хәлдә. *Мин ауа-түнә урыныма барып ултырҙым.* Д. Юлтый.

**АУ-АУ** *ымл.* Ҡабат-ҡабат ау [3] (1 мәғ.) иткән тауыш. Ау-ау итеп ҡысҡырыу.

**АУДИЕ́НЦИЯ** [*рус.* ⟨ *лат.*] *и.* Юғары дәүләт вазифаһындағы кешенең рәсми ҡабул ителеүе.

**АУДИТО́РИЯ** [*рус.* ⟨ *лат.*] *и.* **1.** Лекция, доклад уҡыла торған махсус бүлмә. *Институт аудиторияһы.*

**2.** *йыйн.* Лекция, доклад һ. б. тыңлаған кешеләр. *Аудиторияны ҡыҙыҡһындырыу.* ■ *Беҙҙең поэзия бөгөн ысын мәғәнәһендә ҙур аудитория яулап алды.* Ә. Хәкимов.

**АУҘАРМАЛЫ** *с.* Үҙе ауҙарыла торған. *Ауҙармалы арба. Ауҙармалы машина.*

**АУҘАРТЫУ** *ҡ. йөкм. ҡар.* **ауҙарыу** 1—4.

**АУҘАРЫЛЫУ** *ҡ. төш. ҡар.* **ауҙарыу** 1, 2.

**АУҘАРЫУ** *ҡ.* **1.** Кемде йәки нимәнелер этеп, тартып йығыу; ҡолатыу./Ҡырҡып ҡолатыу (эре ағасты). *Егеттәр, донъяларын онотоп, ағас ауҙара.* «Совет Башҡортостаны», 1965, 27 ғинуар.

**2.** Өҫтөн аҫҡа түңкәреү. *Табаҡты ауҙарыу.* /Түңкәреп бушатыу; түгеү. *Күнәктәге һөттө ауҙарыу.* ■ *Сәлмән көлдө белешенең кәртә артына алып барып ауҙарҙы ла картуф тейәп алды, ти* (Әкиәттән).

**3.** *күсм.* Ғәйепте кешегә ябыу. *Хангилдин, район кәңәшмәләрендә һүҙ ишетеп, әрләнеп ҡайттымы, енен сәсеп Ғафарға йәбешә, бөтә ғәйепте [уға] ауҙара.* Н. Мусин./Эште, бурысты кешегә йөкмәтеү. *Бөтә өй эшен миңә ауҙарҙы ла ҡуйҙылар.*

**4.** *күсм.* Кешене ҡаршы тарафтарҙың береһенән икенсеһенә күсереү. *Алданған ярлыларҙы .. үҙебеҙҙең яҡҡа ауҙарырға кәрәк.* Б. Хәсән.

**5.** *күсм. иҫк.* Бер телдән икенсе телгә күсереү, тәржемә итеү. *Ник балаларға театр яҙмай Мирхәйҙәр, тиҙәр, бар икән руссаң яҙырлыҡ — әйҙә тик ауҙар, тиҙәр.* Ш. Бабич.

◆ **Юҡты бушҡа ауҙарыу** *шул уҡ* **бушты бушҡа бушатыу** (*ҡар.* **буш**).

● *Күренмәгән түңгәк сана ауҙарыр.* Мәҡәл. *Тауҙы тәкә һөҙөп ауҙара алмаҫ.* Мәҡәл.

**АУҘАРЫШЫУ** *ҡ. урт. ярҙамл. ҡар. ауҙарыу* 1, 2.

**АУҘЫРЫУ** *ҡ. йөкм. ҡар.* **ауыу.**

**АУКЦИО́Н** [*рус.* ⟨ *лат.*] *и.* Мал-мөлкәтте кем артығыраҡ хаҡ биреү тәртибе менән күмәк халыҡ алдына сығарып һата торған баҙар. *Йәнлек тиреләре һатыу буйынса халыҡ-ара аукцион.*

**АУҠАН** *с. һөйл.* Кеше-ҡара булмаған; тыныс, аулаҡ. *Ауҡан урын. Ауҡан ваҡыт.*

**АУҠАНЛАУ** *ҡ. ҡар.* **аулаҡлау.**

**АУҠАТ** [*ғәр.*] *и. иҫк.* Ашамлыҡ, ризыҡ.

**АУҠАТЛАНЫУ** *ҡ. иҫк.* Тамаҡҡа ашау.

**АУЛАҠ.** *с.* **1.** Кеше-ҡаранан буш, тыныс. *Аулаҡ ваҡыт. Аулаҡ урын. Аулаҡ мөйөш.*//*Егет менән ҡыҙға аулаҡта осрашыу мөмкин түгел ине.* С. Агиш.

**2.** *и. мәғ.* (*йәки* **аулаҡ өй**) Төп хужаларҙан буш өйҙә йыйыла торған йәштәр кисәһе. *Аулаҡ өйгә барыу. Аулаҡҡа йыйылыу.*

**АУЛАҠЛАУ** *ҡ.* Аулаҡтан файҙаланыу, аулаҡ тороу. *Аулаҡлап үҙебеҙгә кәрәк нәмәләрҙе һорашҡылайыҡ әле, тип килгәйнек.* Ғ. Дәүләтшин.

**АУЛАНЫУ** *к. төш. кар.* **аулау.** *Ауланған балыҡ. Ауланған йәнлек.*

**АУЛАУ** *к.* **1.** Ауға эләктереү (балыҡты). *Балыҡты аулап тотоу тыйыла.*

**2.** Һунар итеп тотоу. *Бүре аулауҙың үҙенә күрә әкәмәте була.* С. Кулибай.

**3.** *күсм.* Үҙ яйыңа ыңғайлатыу, үҙеңә ҡаратыу; әүрәтеү. *Күңелде аулау.* ■ *Эй, донъя, шашма, юҡты алдашма,.. алдама мине яҙың күрһәтеп, аулама мине ҡыҙың күрһәтеп.* Ш. Бабич.

● *Бөркөт ҡартайһа, сысҡан да аулай алмай.* Мәҡәл.

**АУМАҠАЙ** *с.* Бер һүҙҙә, бер тарафта тормай, төрлө яҡҡа ауыусан. *Яратмайым мин шундай аумаҡай кешене. Әле генә былай, әле тегеләй.* З. Биишева.

**АУМАҠАЙЛАНЫУ** к. Аумаҡайлыҡ ҡылыу, аумаҡайлыҡ күрһәтеү. *Ғафури тура һүҙле, үткер зиһенле, уйындағын туп-тура ярып һала торған кеше ине, аумаҡайланып тормай ине.* Ғ. Ғүмәр.

**АУМАҠАЙЛЫҠ** *и.* Бер һүҙҙә тормай, төрлө яҡҡа ауыу сифаты. *Аумаҡайлыҡ күрһәтеү.*

**АУМАЛАТЫУ** *к. һөйл. кар.* **аунаҡлатыу 1.**

**АУМАЛАУ** *к. диал.* Аумаҡайланыу.

**АУМАЛЫ** *с. диал.* Аумаҡай.

**АУМАЛЫ-ТУКМӘЛЕ** *р. диал.* Аңҡы-тиңке.

**АУМАҺАР** *с. диал. кар.* **ауан** 1. *Нимә әйтһәң, шуға ышана, беҙҙең килен аумаһар* (Таҡмаҡтан).

**АУМАҺАРҘАН** *р. диал.* Аңғармаҫтан, уйламаҫтан.

**АУНАҠ** *с.* Ауа һалып барыусан. *Аунаҡ арба. Аунаҡ кәмә.*

**АУНАҠЛАТЫУ** *к.* **1.** Бер яҡтан икенсе яҡҡа әйләндереү; аунатыу. *Ерҙә аунаҡлатыу. Баланы түшәктә аунаҡлатыу. Ҡурсаҡты иҙәндә аунаҡлатып уйнатыу.*

**2.** Ултырышы ныҡ булмаған нәмәне тегеләй--былай ҡыйшайтыу; аушаңлатыу. *Кәмәне аунаҡлатыу.*

**АУНАҠЛАУ** *к* **1.** Бер тегеләй, бер былай тәгәрәү йәки ауыу. *Өлпөлдәп торған үләндә аунаҡлауы, Хәлил бабай менән баллап сәй эсеп, һөйләшеп ултырыуы үҙе бер ғүмер.* Т. Килмөхәмәтов.

**2.** Ултырышы ныҡ булмағанлыҡтан, тегеләй-былай ауыу. *Аунаҡлап торған кәмә.*

**АУНАҠСЫУ** *к. диал. кар.* **аунау** 2. *Эт ҡар өҫтөндә аунаҡсый.*

**АУНАТЫЛЫУ** *к. төш. кар.* **аунатыу.**

**АУНАТЫУ** *к.* Бер яҡтан икенсе яҡҡа әйләндереү; аунаҡлатыу. *Атты аунатыу.* ■ *Бай Ҡыҙраҫҡа ишәкте йөҙҙөрөп, аунатмай алып ҡайтырға ҡушҡан* (Әкиәттән).

**АУНАУ** *к.* **1.** Ятып, тегеләй-былай ауғылау; аунаҡлау. *Йәшел сиҙемдә рәхәтләнеп балалар аунай.*/Тормай-йөрөмәй бер урында ятыу. *Һалдаттар шунда [урындыҡта] аунай.* Д. Юлтый. /Теләһә нисек ташланған хәлдә булыу. *Ишек алдында төрлө ҡоралдар аунап ята.*

**2.** Салҡан ятып ышҡыныу (йәнлек, малға ҡарата). *[Айыу] ағас башынан төшөп, ергә аунарға керешкән.* Ж. Кейекбаев.

**3.** *диал. кар.* **ауыу** 1. *Өйҙәр, ҡаралтылар .. аунап китергә әҙер тора.* Ғ. Дәүләтшин.

● *Ат аунаған ерҙә төк ҡала.* Мәҡәл.

**АУНАШЫУ** *к. урт. кар.* **аунау.** *Балалар ҡарҙа аунаша.* М. Басыров.

**АУРАҠ.** *с. диал.* Аңра.

● *Алама ауылға аураҡ мулла.* Мәҡәл.

**АУСЫ** *и.* Ҡош, кейек тотоу менән шөғөлләнгән кеше; һунарсы.

● *Аусыны аяғы туйҙыра.* Мәҡәл.

**АУҪЫН** *и. диал.* Зәңге.

**А́УТ** [*рус.* ⟨ *ингл.*] *и.* Спорт уйындарында: туптың шайбаның һыҙыҡтан сығыуы.

**АУТОТРЕ́НИНГ** [*рус.* ⟨ *гр.*] *и.* Үҙ-үҙеңде ышандырыу юлы менән идара итеүҙең аңлы психик алымдар йыйылмаһы. *Аутотренинг менән шөғөлләнеү.*

**АУҺАҠ** *и. диал.* Уҫаҡ.

**АУҺАР** *с.* Уны-быны аңлап еткермәгән аңра; алйот.

● *Бер ауһарҙы, бер аҡыллыны тыңла.* Мәҡәл.

**АУШАЙТЫУ** *к.* Бер яҡҡа ҡыйшайтыу; ауыштырыу.

**АУШАЙЫУ** *к.* Бер яҡҡа ҡыйшайыу, ауышыу. *Ҡапҡа бағаналары аушайып бөткән.*

**АУШАНЛАҠ** *с.* Аушан-таушан итеүсен. *Аушанлаҡ кәмә.*

**АУШАНЛАТЫУ** *к.* Әле бер, әле икенсе яҡҡа ауыштырыу. *Ялғашты аушанлатыу.*

**АУШАНЛАУ** *к.* Әле бер, әле икенсе яҡҡа аушайыу. *Өҫтәл аушанлай.* ■ *Гөлшат бик арыған, .. аушанлап килә, ҡулында әлеге бәрәс.* С. Мифтахов.

**АУШАН-ТАУШАН** *р.* Әле бер, әле икенсе яҡҡа ауып. *Аушан-таушан килеү.* ■ *Был ир харап һимереп китә, муйынын да бора алмай башлай, йөрөгәндә ҡаҙ кеүек аушан-таушан итеп йөрөй* (Әкиәттән).

**АУЫҘ** *и.* **1.** Өҫкө һәм аҫҡы яңаҡтарҙан башлап йотҡолоҡҡа тиклем булған ҡыуышлыҡтан торған тауыш биреү һәм аҙыҡланыу ағзаһы. *Ҙур ауыҙ. Уймаҡ ауыҙ. Ауыҙ эсе.* ■ *Ауыҙ эсендә тел йөрөй, тел осонда һүҙ йөрөй.* Салауат Юлаев *Бүреләр теге эт ауыҙындағы һөйәкте тартып ала ла бүлешә башлай* (Әкиәттән). **Ауыҙға алыу** 1) ауыҙға ҡабыу. *Бер нисә аҙналар үткәс, Аҡназар әҙләп-әҙләп ауҙына аш ала башлай* (Әкиәттән); 2) *күсм.* кем йәки нимә хаҡындалыр һүҙ ҡуҙғатып әйтеү; телгә алыу. *Өләсәһе, ауыҙына бер алғас, өҙмәнә лә ҡуйманы. Хәйҙәргә мәктәпкә барыуҙан башҡа сара ҡалманы.* Ф. Исәнғолов. **Ауыҙы арандай** *йәки* **аран ауыҙ** самаһыҙ ҙур йәки ҙур асылған ауыҙ.

**2.** Һауыт-һаба йәки башҡа эсе ҡыуыш нәмәнең асыҡ урыны. *Баҙ ауыҙы. Кеҫә ауыҙы. Көршәк ауыҙы. Мейес ауыҙы. Өң ауыҙы./Тоҡ һымаҡ нәмәләрҙең бәйләнә йәки ябыла торған өҫкө өлөшө. Тоҡсай ауыҙы. Тоҡтоң ауыҙын сисеү.* ■ *Тоҡтоң ауыҙын асайыҡ, йыуасаһын сәсәйек* (Халыҡ йырынан).

**3.** Урман, ҡыуаҡ һ. б. башланған йәки бөткән урыны, сите. *Урман ауыҙы. Әрәмәлек ауыҙы.*

◆ **Ағас ауыҙ** *кар* **ағас. Асыҡ ауыҙ** мәшәү, ебегән. *[Сураман:] Егет өсөн егерме лә еткән, алтмыш та аҙ асыҡ ауыҙға.* Б. Бикбай. **Ауыҙ**

асып ҡалыу ниҙелер ала йәки эшләй алмай буш ҡалыу. **Ауыҙ асыу** 1) *һүҙ ҡуҙғатыу. Китәм тип ауыҙыңды ла асма;* 2) *дини* ураҙала кис ашар алдынан тоҙ йәки емеш ҡабыу. *Ҡояш байып, ауыҙ асыр ваҡыт еткәс, мулла тигәне килеп инде.* С. Агиш. **Ауыҙ бешеү** аңылышып, бүтән улай итмәҫтәй булыу; һабаҡ алыу. *Ауыҙы бешкән халыҡ алдын-артын ҡарау, итәк-еңен йыйыу хәстәрен күрә.* Ф. Иҫәнғолов. **Ауыҙға алғыһыҙ** ашарлыҡ түгел; тәмһеҙ. *Бешергән ашы ауыҙға алғыһыҙ.* **Ауыҙға инерҙәй булыу** *йәки* **ауыҙға инеп барыу** бик йотлоғоп тыңлау. *[Ниса — Камилға:] Зинунәнең ауыҙына инә яҙҙың да баһа, оятһыҙ!* Ә. Вәли. **Ауыҙға йөҙөк ҡабыу** өндәшер ерҙә өндәшмәү. *Айбулат, ауыҙына йөҙөк ҡапҡандай, өндәшмәй-тындашмай ултырып сәй эсте лә, ҡайтып китте.* Һ. Дәүләтшина. **Ауыҙға [ҡара] ҡан тулыу** *ҡар.* **ауыҙ тулы ҡан булыу.** *Ауыҙына ҡара ҡан тулғанда ла серен бирмәҫ намыҫлы ир.* Т. Хәйбуллин. **Ауыҙға ҡарап тороу** ни әйткәнде көтөп тыңларға әҙер тороу. *[Әбей:] Беҙҙә үҫтең. Ҡунаҡлар итәгең булмағандай, шул Фәрхиә ауыҙына ҡарап тораһың.* Х. Ғиләжев. **Ауыҙға ҡаратыу** һүҙгә әүрәтеп, бөтә иғтибарҙы алыу. *Мөҡтәсим ҡарт әңгәмәһен һөйләп, кешене ауыҙына ҡаратып ултыра ине.* С. Кулибай. **Ауыҙға һуҡмаҫ** ниҙер әйтергә, һорарға тәүәккәлләгән йәки тәүәккәллек итергә кәңәш биргән саҡта әйтелә. *Мин ни, ауыҙға һуҡмаҫ әле, тинем дә әйттем дә һалдым. Егеттең егетлеге шунда.* М. Тажи. **Ауыҙ(ҙы) [ҙа] астырмау** һүҙ әйтергә ирек бирмәү. *Берәү ҡаршы һүҙ әйтмәй. Ҡайҙа ул әйтеү, теге Мәсәғүтов ауыҙыңды ла астырмай* Р. Солтангәрәев. **Ауыҙҙан өҙөү** ашар ризыҡты бүлеү. *Балаларҙың ауыҙынан өҙөп биреү.* **Ауыҙҙан ут сәсеү** ярһып, сәсрәп һөйләү. **Ауыҙҙан һүҙ алыу** бер нәмәне әйттереү, һөйләтеү. **Ауыҙҙа һүҙ тормау** сер һаҡламау. *[Сынбулатов:] Ҡара, Тәнзилә еңгә һинең ауыҙыңда һүҙ тормай торған. Был хаҡта .. сәсеп ташлайһы булма.* М. Тажи. **Ауыҙҙы бешереү** берәй эштә бәләгә тарыу. **Ауыҙын ҡаплау** (*йәки* **ябыу**) өндәшмәҫлек итеү; өнөн тығыу. *Афзал ошоларҙы әйтте һалды, Ғимайҙың ауыҙын ҡапланы.* С. Ҡудаш. **Ауыҙҙы сөйгә элеү** 1) кәрәк ерҙә һөйләшмәү. *[Йәнтимер:] Улай ауыҙыңды сөйгә элеп, урам тапап йөрөһәң, ғүмерҙә эш таба алмаҫһың.* С. Агиш; 2) асығыу, ас ултырыу. *Байҙар ҡаҙан аҫҡанда, ярлы ауыҙын сөйгә элә* (Халыҡ йырынан). **Ауыҙ итеү** ашап ҡарау, тәмләү. **Ауыҙ йомоу** өндәшмәҫ булыу, һөйләшмәү.— *Ҡәйнешең булғас, ниңә һөйләшмәҫкә, нисек ғел генә ауыҙ йомоп йөрөргә.* Т. Хәйбуллин. **Ауыҙ йырыу** бушҡа көлөү. *[Самат:] Ауыҙығыҙҙы бик иртә йыраһығыҙ, иларға тура килмәһен.* Х. Ибраһимов. **Ауыҙ күтәреп** (һүҙ һөйләү, йырлау һ. б.) оялып-тартынып тормай (һүҙ һөйләү, йырлау һ. б.). *[Емеш:] Уй, шул хәтле кеше алдында ҡалай ауыҙ күтәреп йырлап тормаҡ кәрәк.* З. Биишева. **Ауыҙ ҡолаҡҡа етеү** ныҡ шатланып йылмайыу. *Йәгәфәрҙең ауыҙы ҡолағына еткән. Ул, ах та ух килеп, һәр балығының нисек эләккәнен һөйләй.* Ф. Иҫәнғолов. **Ауыҙ менән ҡош тотоу** уңған, булдыҡлы булыу. **Ауыҙ тултырып** ҙур итеп, оло итеп. *Ауыҙ тултырып һағыҙ сәйнәү. Ауыҙ тултырып һөйләү.* **Ауыҙ тулы ҡан булыу** бик ауыр хәлдә ҡалыу. **Ауыҙ һыуы ҡойолоу** бик ашағы килеү; шеләгәй ҡойолоу. *Ә айыу .. бал өмөт итеп, ауыҙының һыуы ҡойолоп ятҡан төлкөнө бөтөнләй онотҡан.* Ж. Кейекбаев. **Ауыҙ һыуы ҡороп** *йәки* **ауыҙ һыуын ҡоротоп** ҙур ләззәт табып (һөйләү). *Күрше-күләм ауыҙ һыуы ҡороп: «Себерҙә ат осһоҙ икән...» — тип һөйләй.* Б. Бикбай. **Ауыҙы бер** (*йәки* **биш) бешерем** саманан тыш ҡалын иренле кешегә ҡарата әйтелә. **Ауыҙынан сыҡҡанды эт ашамаҫ** хаяһыҙ, әшәке һүҙле кешегә ҡарата әйтелә. **Ауыҙын аҫһа, үпкәһе күренә** бик ярлы кешегә ҡарата әйтеле. *Бик ярлыландылар [Әлимәләр], ауыҙҙарын аҫһа, үпкәләре күренеп тора.* Д. Юлтый. **Ауыҙына шайтан төкөргәнме ни** бик шәп һөйләгән кешегә ҡарата әйтелә. **Ауыҙын көрәк менән тишкән** ғәйбәтсе кешегә ҡарата әйтелә. **Ауыҙын ҡыу сыбыҡ менән һөрткән** юҡ та юҡ тип торған һаран. **Ауыҙыңа бал да май!** яҡшы хәбәр килтергән кешегә әйтелә. **Ауыҙыңдан ел алһын!** насар хәбәргә ҡаршы әйтелә. *[Гөлйемеш:] Ауыҙыңдан ел алһын, юҡҡа юрап ултырма.* С. Агиш. **Ауыҙ эсендә бутҡа бешереү** аңлайышһыҙ итеп һөйләү, мығырлау. **Бер ауыҙ һүҙ** *ҡар.* **һүҙ. Бер ауыҙҙан** бер булып (ниҙер әйтеү). *Халыҡ бер ауыҙҙан яңы ҡарарҙы хупланы.* **Бер-ике ауыҙ һүҙ** *ҡар.* **һүҙ. Бәлеш ауыҙ** илаҡ кешегә әйтелә. **Ебегән ауыҙ** 1) һүҙен һөйләй алмай торған кешегә әйтелә; 2) булдыҡһыҙ, бешмәгән. **Иләк ауыҙ** ауыҙында һүҙ тормаҫ кешегә әйтелә. **Иҫке ауыҙҙан яңы һүҙ** (*йәки* **хәбәр**) көтмәгәндә бер аптырарлыҡ хәбәр ишеткәндә әйтелә.— *Бынағайыш! — тине әбей.— Иҫке ауыҙҙан яңы һүҙ тигәндәй, ул һүгыш әллә ҡарсыҡтарға кәрәк тиһеңме?* Х. Мохтар. **Йырыҡ ауыҙ** 1) бушҡа көлөп торған кешегә әйтелә; 2) *диал. ҡар.* **иләк ауыҙ. Ҡашыҡ ауыҙ** ҙур ауыҙлы кешегә әйтелә. **Ҡыҙыл ауыҙ** йәп-йәш көйө ололар менән алышҡан кешегә әйтелә. *Бөтәһен дә һөрөп сығарырға кәрәк ул ҡыҙыл ауыҙҙарҙың! — тип ҡасҡырҙы мәзин.* Ғ. Ғүмәр. **Ҡоро ауыҙ сығарыу** ашатмай-эсермәй сығарыу. **Мәмәй ауыҙ** *ҡар.* **мәмәй** 2. **Сей ауыҙ** *ҡар.* **ҡыҙыл ауыҙ. Тишек ауыҙ** *ҡар.* **иләк ауыҙ. Урам ауыҙ** ауыл буйлап ғәйбәт һөйләп йөрөгән кешегә ҡарата әйтелә. **Үлеп барғанда ауыҙыңа бер тамсы һыу һалмаҫ** кешегә яҡшылыҡ эшләмәгән, ҡаты бәғерле кешегә ҡарата әйтелә. **Яман ауыҙ** *ҡар.* **яман. Эт ауыҙына ағас тығып йөрөү** эшһеҙ, буштан-буш йөрөү. *[Әхмәҙи — Әбделхаҡҡа:] Ялҡау! Ауыл араһында эт ауыҙына ағас тығып йөрөргә белә, донъяһы янғанда ҡайғыһы ла юҡ!* Ж. Кейекбаев.

● *Алма беш, ауыҙыма төш.* Әйтем. *Ауыҙы бешкән өрөп эсер.* Мәҡәл. *Ил ауыҙына иләк ҡаплап булмай.* Мәҡәл. *Урман ауыҙы тар булыр, ҡыҙҙар ауыҙы бал булыр.* Әйтем.

**АУЫҘАУ** *ҡ.* Балын алыу өсөн ҡорт ҡунған ағасты йыҡмай тишеп ауыҙ яһау.

**АУЫҘБЕШМӘ** *и. диал.* Бешмә.

**АУЫҘҘАУЫҠ** *и. диал.* Бешмә.

**АУЫҘЛАНДЫРЫУ** *ҡ.* Башлап ризыҡ (бал, май) ҡаптырыу (яңы тыуған балаға).

**АУЫҘЛАНЫУ** *ҡ.* **1.** Ослайып тишелеү (шешеккә ҡарата). *Сикан һытылып, ауыҙланып тора.*

**2.** Ауыҙға әҙ генә аҙыҡ алыу, тамаҡҡа алыу **3.** Бал, май йәки инә һөтөнән башлап ашап ҡарау, тәмләү (яңы тыуған балаға ҡарата).

**АУЫҘЛАУ** *ҡ.* Тәмләп ҡарау, ашап ҡарау. *[Әбей — абыстайға:] Ҡырын күҙ һалманың. Өйөңдөң түренә үрләттең. Байтаҡ ҡул кереңде ауыҙланым, усыңа йома белмәнең.* Т. Хәйбуллин.

**АУЫҘЛЫҠ** *и.* Йүгәндең ат ауыҙына кейҙерелә торған быуынлы тимере. *Сәфәр ҡара айғырҙың ауыҙлығын һалдырып, өҫтөнә септә япты ла, һыуындырырға ҡуйҙы.* С. Агиш. *Атҡа ғына менһәң, бик сапма, ауыҙлығын уның нык тартма* (Халыҡ йырынан).

♦ **Ауыҙлығын тартып ҡарау** *шул уҡ* **ҡылын тартып ҡарау** (*ҡар.* **ҡыл**). **Ауыҙлыҡ булыу** ауыҙ сите иҙелеү (ат ауыҙлығы тешләтеп имләйҙәр).

**АУЫҘЛЫҠЛАНЫУ** *ҡ. төш. ҡар.* **ауыҙлыҡлау.** 1. *Ауыҙлыҡланған ат.*

**АУЫҘЛЫҠЛАТЫУ** *ҡ. йөкм. ҡар.* **ауыҙлыҡлау** 1. *Атты ауыҙлыҡлатыу.*

**АУЫҘЛЫҠЛАУ** *ҡ.* **1.** Ауыҙлыҡ кейҙереү. *Айғырҙы ауыҙлыҡлау.* ■ *[Күсәрхан — Ҡуҙыйкүрпәскә:] Инде һин ана теге өс йыл тыу йөрөгән бейәне тотоп, ауыҙлыҡлап, бында килтер.* «Ҡуҙыйкүрпәс менән Маянһылыу».

**2.** *күсм.* Ҡаты сара менән ихтыярҙан мәхрүм итеп, үҙ иркенә буйһондороу. *Ерҙәге бар яуызлыҡты ауыҙлыҡлап алғым килә.* Н. Нәжми. .. *Нәпсеңде үҙ ваҡытында, тейешле урынында ауыҙлыҡлай белергә кәрәк.* Д. Исламов.

**АУЫҘ-МОРОН** *и. йыйн.* Ауыҙ менән танау. *Аттың йомолған күҙҙәрен, ауыҙ-морон тирәләрен себендәр һырып алған.* Б. Бикбай.

**АУЫҘСА** *и.* Япраҡ тиресәһенең күҙәнәктәре араһындағы тишек (дым һәм һауа алышыныу өсөн).

**АУЫҘ-ТЕЛ: ауыҙ-тел ижады** *шул уҡ* **халыҡ ижады** (*ҡар.* **ижад**).

**АУЫҠ** *[гәр.] и.* Ваҡыт араһы, күпмелер ваҡыт. *Саба торған аттар ауыҡҡа ла, оҙонға ла китте.* М. Буранғолов. **Бер ауыҡ** бер аҙ ваҡыт. *Ике батыр ҙа ҡылыстарын танау осонда ғына ҡулға-ҡул терәгән көйө бер ауыҡ ҡатып ҡалғандар.* Ғ. Хөсәйенов.

**АУЫЛ** *и.* Ауыл хужалығы менән шөғөлләнеүсе кешеләр йәшәгән урын. *Ҙур ауыл. Иҫке ауыл. Тыуған ауыл. Күрше ауыл. Ауыл ере. Ауыл клубы. Ауыл тормошо.* ■ *Ауылдан ҡалаға — икмәктәр, ҡаланан ауылға — ҡулдәктәр.* Ғ. Амантай. **Ауыл араһы** урамдағы өй һәм кешеләр, урам буйы. *Ауыл араһына сығыу.* **Ауыл ашаһы** бер нисә ауыл аша ятҡан. *Ауыл ашаһы ер.* **Ауыл советы** совет власының ауыл ерендәге беренсе органы.

♦ **Ауыл хужалығы** материаль етештереүҙең игенселек һәм малсылыҡ менән шөғөлләнгән төп тармағы.

**АУЫЛДАУ** *ҡ.* Ау-ау итеп ҡысҡырыу. *Ҡайҙалыр балаһын саҡырып илек ауылдай.* Я. Хамматов.

**АУЫЛДАШ** *и.* Бер ауылдан булған кешеләр (бер-береһенә ҡарата).

● *Алама булһа ла, ауылдашың яҡын.* Әйтем.

**АУЫЛЙЫУ** *ҡ. ҡар.* **ыуылйыу.**

**АУЫЛНАЙ** *и. иҫк. тар.* Ауыл менән идара итеү өсөн ҡуйылған кеше; ауыл башлығы. *Ауылнай һайлау.*

**АУЫЛСЫ** *и.* Ауыл араһында йөрөргә яратҡан кеше; йөрөмтәл. *Ябалаҡ һымаҡ ялпанлап, ауылсы булма, киленсәк* (Туй йырынан).

**АУЫМБАҠ** *и. диал.* Бәпембә.

**АУЫН** *и.* Ҡош тота торған ау (төбөн тарыраҡ, ауыҙын ҡор, һуйыр һыйырлыҡ киң итеп, уратып ҡаҙыҡ ҡағалар; ҡаҙыҡтарҙың өҫкө осон уратып ҡуша бәйләйҙәр; уртаға тағы бер ҡаҙыҡ ҡағып ҡуялар; өҫкә өйрөлөп тора торған арҡыры таяҡ һалалар ҙа, шул таяҡҡа иген башаҡтары йәки емешле ағас ботаҡтары бәйләйҙәр; ҡош килеп емгә ултырһа, тәкмәсләп эскә төшә, ә ем кире әйләнеп, тағы күтәрелеп ултыра).

**АУЫНҠЫ** *с.* Бер яҡҡа ауышыраҡ. *Ауынҡы өҫтәл.*

**АУЫР** [1] *с.* **1.** Ауырлығы ҙур; һәлмәк, тос; киреһе еңел. *Ауыр йөк. Ауыр сукмар. Ауыр таш. Ауыр булыу. Ауыр итеү. // Ауыр күтәреү.* ■ *Урал, ни эшләргә, ҡайҙа барырға, тип аптырап торғанда, арҡаһына ауыр тоҡ йөкмәп үҙып барған бик һылыу бер ҡыҙҙы күреп ҡалды, ти.* «Урал батыр». / Ғәҙәттәгегә ҡарағанда эрерәк, һәлмәгерәк. *Ауыр башаҡ.* ■ *Күҙгә ауыр йәштәр тығылды.* Д. Юлтый.

**2.** Һимереүҙән хәрәкәтсәнлеген юғалтҡан, ауырайған, килбәтһеҙ (кешегә, хайуанға ҡарата). *Һылыуҡай өлкән ауыр кәүҙәле, ҡыҙыл йөҙлө .. Зилскийгә ҡарап, ҡурҡып, сәңгелдәк артындағы мөйөшкә һырлыҡты.* Ғ. Дәүләтшин. **Ауыр һөйәкле** ауыр кәүҙәле. / Ҡуҙғалыуға ығыш, әкрен хәрәкәт иткән. // *Ауыр атлау. Ауыр баҫыу.* ■ *Олторағың һәлберәп, ауыр булма, киленсәк* (Туй йырынан).

**3.** Башҡарыуға ҡайын; ҡатмарлы. *Ауыр мәсьәлә. Ауыр эш. // Ауыр хәл итенә торған мәсьәлә.* ■ *Һөнәрсенең үҙе өсөн ауыр хеҙмәт емешен кешеләргә бүләк итеүҙән дә ләззәтле, һатып биреүҙән дә ғазаплы эш булмай.* З. Биишева. *Юл ауыр, юл болғауыр булһа ла, милләт, әйҙәле: алда рәхәт кәҙерене белмәккә михнәт файҙалы.* Ш. Бабич. // **Ауырға [тура] килеү** башҡарыуы ҡыйын булыу. *[Ғәләү] булмаһа, районда яңы эште башлап ебәреү хәтһеҙ ауырға килер ине.* Б. Бикбай / Ауырлыҡ менән башҡарылған. *Ауыр әйтеү.*

**4.** Ҡыйын кисерелгән; ҡыйын. *Ауыр шарт. Ауыр һуғыш. // Йыл ауыр килеү.* ■ *Һуғыш монары ҡапланы Ватандың яҡты күген. Һеҙҙең дә иңдәр күтәрҙе һуғыштың ауыр йөгөн.* Р. Ниғмәти. / Ҡыйынлыҡтар, мохтажлыҡтар, ҡайғы менән тулы. *Ауыр йыл. Ауыр тормош. Ауыр яҙмыш. // Ауыр йәшәү.* ■ *— Беҙ күргән ауыр көндәр һеҙгә лә килә ҡалһа, һис тә биреләшеп бөгөлмәгеҙ.* Һ. Дәүләтшина. / Ауыртыу, һыҙланыу тыуҙырған. *Ауыр яра.*

**5.** Күңелгә ҡыйын; ҡайғылы, бошонҡо. *Ауыр тойғо. Ауыр кисереш. Ауыр тынлыҡ. Ауыр уй. Ауыр хәбәр. // Ауыр көрһөнөү. Ауыр кисереү.* ■ *Зәйнәп тә шул ауыр хистәрен бушатырға һорай торғандыр.* Ғ. Сәләм. *Әллә нисек ауыр тәьҫир итә тыуған — үҫкән илде үйлауы* (Халыҡ йырынан).

**6.** Һулыш өсөн насар; тонсоу. *Ауыр һауа.* ■ *Баш әйләнә, танауға ниндәйҙер ауыр еҫ бәрелә.* С. Агиш.

**7.** *күсм.* Тотанаҡлы, сабыр, тыныс. *Ауыр тәбиғәтле кеше. Ауыр холоҡло.*

◆ **Ауыр аяҡлы** ауырлы, йөклө. *Ауыр аяҡлы ҡатын.* **Ауырға алыу** йәберһенеү, үпкәләү. *[Нигмәт:] Ауырға алма. Көсләп аскан күҙҙең нуры юҡ.* Ҡ. Аралбаев. **Ауыр тупрағы еңел булһын** *ҡар.* **тупраҡ. Күңелгә ауыр алыу** *ҡар.* **күңел. Күңелгә ауыр булыу** *ҡар.* **күңел.**

**АУЫР** [2] *и. һөйл.* Буйҙағы бала; йөк. *Алты айлыҡ ауыры бар. Өс айлыҡ ауыр күтәргән.* ■ *Ҡушылған көндө үк минең ауырым булып ҡалды* (Әкиәттән). **Ауырға ҡалыу** йөклө булыу; буйға ҡалыу.

**АУЫРАЙТЫУ** *ҡ.* **1.** Ауырға әйләндереү, ауыр итеү. *Йөктө ауырайтыу. Ямғыр һаламды ауырайтты.*

**2.** Ҡыйынға әйләндереү, ҡыйынлаштырыу. *Арба тәгәрмәстәренә батҡаҡ уралып, сак-саҡ атлаған хайуандарҙың хәлен тағы ла ауырайтты.* Ғ. Аллаяров.

**3.** *әйһ. ф. ҡар.* **ауырайыу** 4. *Ахыры көн боҙолор, ауырайтып тора.*

**АУЫРАЙЫУ** *ҡ.* **1.** Ауырға [1 мәғ.] әйләнеү, ауыр булыу. *Килә торғас, [егеттең] йөгө бик ауырая башлай* (Әкиәттән).

**2.** Ҡыйынға әйләнәү; ҡыйынлашыу. *Ҡом тулһа, [винтовканың] затворын асыу, ябыу эше аткан һайын ауырая.* Д. Юлтый.

**3.** Етешһеҙгә, мохтажға әйләнеү; ҡыйынлашыу. *Заманалар ауырайҙы.* ■ *Хәҙер тормош ауырайҙы шул. Бер яҡтан тағы ла һуғыш башланды, икенсе яҡтан Әлкаман бай ҡыҫа.* Ш. Насыров.

**4.** Йоҡо баҫыу, йоҡомһорау. *Ауырайып торам, бер ҙә яйым юҡ.* / Арып, тумбып, еңеп төшөп килеү (айырым ағзаға ҡарата). *Баш ауырайҙы.* ■ *Мин окопта түбыкланып ултырҙым. Күҙ алдары ҡараңғылана, күҙ ҡабаҡтары ауырая башланы.* С. Кулибай.

**5.** Насарға табан китеү (һаулыҡҡа ҡарата). *Үпкә ауырыулы кешеләрҙең хәле яҙлы-көҙлө ауырая.*

**АУЫРЛАНЫУ** *ҡ. ҡар.* **ауырайыу** 1, 3—5.

**АУЫРЛАТЫУ** *ҡ. ҡар.* **ауырайтыу.**

**АУЫРЛАШТЫРЫУ** *ҡ.* Ҡыйын хәлгә ҡуйыу; ҡыйынлаштырыу. *Ямғыр эште ауырлаштырҙы.*

**АУЫРЛАШЫУ** *ҡ.* **1.** Ауыр хәлгә ҡалыу; ҡыйынлашыу. *Ямғырға киткәс бесән әҙерләү эше ауырлашты.*

**2.** Етешһеҙгә, мохтажға әйләнеү; ҡыйынлашыу. *[Шәһиткә] 11 йәш тигәндә атаһы үлеп киткәс, тормош тағы ла ауырлашты.* Ғ. Шафиков.

**3.** Насарға табан китеү. *Ныҡ алйығанлыҡтан, хәле бик ауырлашҡан [Унан] бөтөнләй хәле бөтөп йығылған* (Әкиәттән).

**АУЫРЛЫ** *с.* Ауырға ҡалған; йөклө. // *Ауырлы көйө эшләп йөрөү.*

**АУЫРЛЫҠ** [1] *и.* **1.** *физ.* Есемдең ергә тартыу көсө менән билдәләнгән үҙенсәлеге. *Ауырлыҡ көсө.* / Нәмәнең үлсәүгә һалып билдәләнгән үҙенсәлеге; һәлмәклек. *Ауырлыҡ тартыу. Ауырлыҡ кәмеү.* ■ .. *Етмеш батман ауырлыҡ күтәреп күккә сөймәгән, өс бармағы осонда төшөмәйенсә тотмаған кеше — батыр ир булмаҫ.* «Урал батыр». **Тереләй үлсәнгән ауырлыҡ** малдың тере көйө тартҡан ауырлығы. **Үҙ ауырлығы** нәмәнең һауыттан башҡа булған таҙа ауырлағы.

**2.** Башҡарыуҙағы ҡыйынлыҡ; ҡатмарлыҡ. *Техник проектты билдәләүҙә бер ауырлыҡ бар ине.* Н. Мусин. / Эш-хәлдәге мәшәҡәт.— *Ҡурҡма, ҡустым, ҡурҡма. Һиңә ауырлығым төшмәҫ, үҙ аяғым менән ҡайтырлыҡ хәлем бар әле.* М. Тажи.

**3.** Көнкүрештәге ҡыйынлыҡ, мохтажлыҡ. *Ауырлыҡ килеү. Ауырлыҡ күреү. Ауырлыҡҡа төшөү.* ■ *Донъя ауырлығы еңел күренә, арыҫландай сабыр ир булһа* (Халыҡ йырынан). / Эш-хәлдең насар шауҡымы; ҡыйынлыҡ. *[Ҡарлуғас:] Атайым түрәләр менән әллә ни ҡорло һүҙҙәргә килеп бөттө. Ҡуйсы, ҡуйсы, үҙенә ауырлыҡ тейеп тормаһа ярар ине.* Б. Бикбай.

**4.** Йоҡомһоратып торған хәлһеҙлек. *Ҡапыл бөтә кәүҙәмде ауырлыҡ баҫты, күҙҙәрем йомола башланы.* Д. Юлтый.

◆ **Ауырлыҡ һалыу** эштең ҡыйын өлөшөн йөкмәтеү. *[Булат] Бер кемгә ауырлығын һалмай, үҙен ҡарағас та еткән бит инде.* К. Кинйәбулатова. **Ауырлыҡ юғалыу** *физ.* тотҡарһыҙ төшкән есемдең ерҙең тартыу көсөнән ҡотолоу хәле. **Удель ауырлыҡ** есем ауырлығының 4° йылылыҡта шул уҡ дәүмәлдәге һыу ауырлығына булған нисбәте.

● *Күргәндең алыҫлығы юҡ, күтәргәндең ауырлығы юҡ.* Мәҡәл.

**АУЫРЛЫҠ** [2] *и. ҡар.* **ауыртмаҡ.** 1,2.

**АУЫРСА** *и. диал.* Ашҡа ҡатыу өсөн ҡыпҡылыҡҡа тоҙлап ҡуйған ҡорот.

**АУЫРСЫЛЫҠ** *и. ҡар.* **ауырлыҡ** [1] 3, 4.

**АУЫРСЫН** *и. диал.* Бешмә.

**АУЫРТМАҠ** *и.* **1.** Ауырлыҡ өсөн һалынған йәки тағылған нәмә.

**2.** Сәсте аҫҡа тартып торһон өсөн үрмескә таҡҡан тәңкә.

**3.** *диал.* Башаҡас.

**4.** *диал.* Батырғыс.

**5.** *диал. ҡар.* **аҫма** [1].

**АУЫРТТЫРЫУ** *ҡ.* Ауыртыуға килтереү. *Башты ауырттырыу. Ҡулды ауырттырыу.*

◆ **Юҡтың башын ауырттырыу** *ҡар.* **юҡ.**

**АУЫРТЫНЫУ** *ҡ.* **1.** Ауыртҡанлыҡ һиҙеү; һыҙланыу. *Ҡайһы берҙә стенокардия булған ваҡытта ауыртыныу булмай, тик йөрәк ҡыҫҡаны һиҙелә.* З. Зaһидуллин.

**2.** *күсм.* Әсе тойғо кисереү; әсенеү. *Мин [Клаваны] көнләшәм. Аҙаҡтан күңелдә көнләшеү урынына ниндәйҙер нескә ауыртыныу, үкенеү тойғоһо ғына, һүнеп барған утлы күмер һымаҡ, көйрәп ҡала.* А. Карнай.

**АУЫРТЫУ** *ҡ.* Тән ғазабы кисереү. *Ауыртҡан ер. Баш ауыртыу. Бил ауыртыу. Эс ауыртыу.*

◆ **Ауыртҡан ер** (*йәки* **урын**) күңелде әрнеткән нәмәгә ҡарата әйтелә. *Был һүҙ Әхмәҙиҙең ауыртҡан еренә тейҙе.* Ж. Кейекбаев. **Ауыртмаҫ** (*йәки* **ауыртмаған**) **башҡа тимер таяҡ** көтмәгәндә килеп сыҡҡан бәләгә ҡарата әйтелә.— *Мәсгүтте эштән ҡыуғандар. Бына тағы ауыртмаҫ башҡа тимер таяҡ.* **Ауыртмаған яҡҡа ятыу** уңайлыраҡ

юлды һайлау. *[Әхмәтшәриф:] Өйрәтеүҙән уҙғанһың инде, аҡыл белмәгән бала түгелһең хәҙер. Ауыртмаған ягыңа ят, һуңынан үпкәләргә тура килмәһен.* А. Игебаев.

**АУЫРҺЫНДЫРЫУ** *ҡ.* **1.** Ауырға һанатыу; ҡыйынһындырыу.

**2.** *эйһ. ф. ҡар.* **ауырһыныу** 1. *Иртәнсәк торорға ауырһындыра.*

**АУЫРҺЫНЫУ** *ҡ.* **1.** Ауыр күреү, ауырға һанау; ҡыйынһыныу. *Уның [Ғәлиҙең] эш тураһында ауырһыныл, зарланып һөйләгәнен ишеткән кеше юк.* М. Ғафури.

**2.** *диал.* Ауырыҡһыныу.

**АУЫРҺЫУ** [1] *ҡ.* Ашарға ауыр күреү (ныҡ татлы йәки сөсө ашамлыҡты).

**АУЫРҺЫУ** [2] *с. ҡар.* **киңерһеү.** *Асыгыуҙан йөрәктәр өҙөлөп, түҙер хәл ҡалмагас, ерҙән йәшел үләндәр өҙөп ҡабып ҡарайбыҙ, уның да файҙаһы юк, етмәһә, ауыҙга ауырһыу тәм биреп, ҡара һыуҙар ҡойола башлай.* Д. Юлтый.

**АУЫРЫҠҺЫНЫУ** *ҡ.* Еңел генә ауырыу; һауһыҙланыу. *Ауырыҡһынып тороу. Ауырыҡһынып торам, хәл юк.*

**АУЫРЫТЫУ** *ҡ.* **1.** Ауырыу [2] итеү. *Кешене аяҡтан үткән һыуыҡ ауырыта.*

**2.** *эйһ. ҡар.* **ауырыу** [1]. *Бөгөн ауырытып тора.*

**АУЫРЫУ** [1] *ҡ.* Һауһыҙ хәлгә төшөү, һауһыҙ хәлдә булыу; һауһыҙланыу. *Баш ауырыу. Ҡаты ауырыу. Сәсрәп ауырыу.* ■ *Берҙән-бер көндө бабай ауырып, аяҡтан ауган* (Әкиәттән).

**АУЫРЫУ** [2] *и.* **1.** Организмдың ғәҙәти эшмәкәрлеге боҙолған хәл; һауһыҙлыҡ. *Йогошло ауырыу. Балалар ауырыуы. Мал ауырыуы. Үҫемлек ауырыуы. Ауырыу булыу. Ауырыу итеү.* ■ *Сит бисәләр бешергән ашты ашап, Аҡназар бер заман ауырыуга һабыша* (Әкиәттән).

**2.** *с. мәг.* Организмдың ғәҙәти эшмәкәрлеге боҙолған; һауһыҙ. *Ауырыу бала. Ауырыу мал.* / Операциянан һуңғы осорҙо ауырыу бик ауыр кисерә.

♦ **Тир ауырыуы** бик йоғошло биҙгәкле ҡаты ауырыу; тиф.

**АУЫРЫУ-СЫРХАУ** *и. йыйн.* Һәр төрлө ауырыу.

**АУЫРЫУХАНА** *и. ҡар.* **хәстәхана.**

**АУЫРЫУ-ҺЫҘЛАУ** *и. йыйн.* Һәр төрлө ауырыу; һауһыҙлыҡ. *Ауырыу-һыҙлау күрмәгән, үлем барын белмәгән.* «Урал батыр».

**АУЫРЫШЫУ** *ҡ.* Күмәкләп бер юлы ауырыу. *Бала-сагалар ауырышып тора.*

**АУЫҪҠАЛ** *с. диал.* Аумаҡай.

**АУЫУ** *ҡ.* **1.** Торған ерҙән ҡолау. *Тирәк тамыры актарылып, диңгеҙ өҫтөнә ауа* (Әкиәттән). /Тотош емерелеп ҡолау. *Минск йорто ауганга йөрәге янды Өфөмдөң.* Р. Ниғмәти.

**2.** Арып, хәлдән тайып килеп йығылыу. *Түшәккә ауыу.* ■ *Секретарь кәүҙәһен тота алмай .. һөрмәкләнә-һөрмәкләнә килеп урындыкка ауҙы.* Ғ. Дәүләтшин. / Көскә килеп етеү. *Сәгәт ундарҙа гына беҙ гусар полкының штабына ҡайтып ауҙыҡ.* Д. Юлтый. *Сафура уның [Заһиттың] күкрәгенә ауҙы.* Һ. Дәүләтшина.

**3.** *кит.* Яуҙа, ҡыҙыу хеҙмәттә йығылып үлеү. *Яу ҡырында тыуган иле өсөн ир-егеткәй юҡҡа ауырмы?!* Н. Нәжми. *Донъя беҙҙән генә ҡалмаган ул, бер саҡ килер үлем — ят ҡунаҡ; ауһам ине шул саҡ бәйгеләрҙә йөрәге ярылып үлгән ат һымаҡ.* М. Кәрим.

**4.** Билдәле бер тәңгәлдән үтеү (ваҡытҡа ҡарата). *Төш ауыу. Көн кискә ауыу. Төн уртаһы ауыу.* ■ *Ҡояш төшлөктән бер аҙ гына ауа башлагас та, .. халыҡ волость йортона ҡарай агыла башланы.* Т. Хәйбуллин.

**5.** *күсм.* Ҡара-ҡаршы ике тарафтың береһенән икенсеһенә күсеү. *Күпселек ягына ауыу.* ■ *Киленгә әҙерәк тел ҡатҡайным, .. ире ягына ауҙы ла китте.* С. Ҡудаш.

♦ **Иҫтән ауыу** *ҡар* **иҫ** [1] 2. **Өҫкә ауып тороу** бик яҡын, бик бейек булыу (ағас-ташҡа ҡарата). *Урман ягында агасҡа мохтажлыҡ юк, шәм шикелле ҡарагайҙар өҫтөңә ауып тора.* М. Тажи.

**АУЫШ** *с.* Торошо-ятышы бер яҡҡа ҡыйыш; иңкеү. *Ауыш багана. Ауыш иҙән. Ауыш юл. Ауыш булыу. Ауыш итеү. // Ауыш ултырыу.*

**АУЫШТЫРЫУ** *ҡ.* **1.** Ауыш хәлгә килтереү, ауыш итеү. *Багананы ауыштырыу.*

**2.** *күсм.* Ҡара-ҡаршы ике тарафтың береһенән икенсеһенә күсереү. *Үҙ ягыңа ауыштырыу.*

**АУЫШ-ТЫУЫШ** *р.* Ян-яҡҡа сайҡалып; алпан-толпан. *Ауыш-тыуыш атлау. Ауыш-тыуыш йөрөү.*

**АУЫШЫУ** *ҡ.* **1.** Тура мөйөштән тайыу, ауышҡа әйләнеү; ҡыйшайыу. *Ауышкан өй.* ■ *Телеграмм баганаһы ныҡлы бит ауышырга* (Халыҡ йырынан).

**2.** *күсм.* Көн йәки төн үҙәгенән үтеү (ваҡытҡа ҡарата). *Төн таңга ауышкан.* ■ *Көн кискә ауышканда Аргынбай ҡалага яҡынлашты.* С. Агиш. *Төш ауышкас сахранан ҡайтыр халыҡ, йыйын бөтөр.* Ш. Бабич.

**3.** *күсм.* Ҡара-ҡаршы ике тарафтың береһенән икенсеһенә күсеү. *Халыҡтың күбеһе Бугәсәү ягына ауышкан.* Ә. Ғафаров.

**АФАҠ** *[гәр.] с. иҫк. кит.* Бик юғары. *Кеше бит һин, кешеләр бит барыбер. Әгәр дәрәжәң булһа ла бик афаҡ, белем арткан һайын артыр түбәнлек.* М. Ғафури.

**АФАРИН** [*фарс.*] *ымл.* Кемдендер эш-ҡылығын, һүҙен хуплағанда әйтелә. *Сөнәгәт йырлап бөткәс, «һә-әй, афарин-н!» — тип ҡуйҙы Сәмигулла.* Ж. Кейекбаев. *«Афарин Кәримгә! Йәшәһен беҙҙең бәләкәй Кәрим!» Был һүҙҙәр[гә] Кәрим үҙе лә бик шатланды, йөҙө асылып китте.* Ш. Шәһәр.

**АФАТ** [*гәр.*] *и.* Ҙур бәлә, һәләкәт. *Күп тә үтмәгән, ҡатайҙарга .. афат килгән. Ҡайҙандыр сит халыҡ ябырылган, талаган, ҡыҙҙарын урлаган.* Ә. Вахитов. *Һаҡла орлоҡ һипкән ер күкрәген төрлө афат, ҡоро-ҡыулыҡтан!* Д. Юлтый.

**АФАТЛАНЫУ** *ҡ.* Ҙур бәләгә ҡалыу, һәләкәткә осрау.

**АФАТЛЫ** *с.* Һәләкәтле, фажиғәле. *Афатлы үлем. Афатлы һугыш.*

**АФҒАН** *и.* Афғанстандың төп халҡын тәшкил иткән милләт һәм шул милләттең бер кешеһе (иран телдәренең береһендә һөйләшә). *Афган халҡы. Афган ҡыҙы. Афган теле.*

**АФЁРА** [*рус.* ⟨ *фр.*] *и.* Байыу маҡсаты менән эшләнгән намыҫһыҙ, бысраҡ эш.

**АФЕРИ́СТ** [*рус.*] Афера менән шөғөлләнгән кеше.

**АФИ́ША** [*рус.* ⟨ *фр.*] *и.* Тамаша тураһындағы ҙур белдереү. *Театр афишаһы.*

**АФОРИ́ЗМ** [*рус.* ⟨ *гр.*] *и.* Ҡыҫҡа ғына итеп әйтелгән тәрән мәғәнәле һүҙ; тапҡыр һүҙ.

**АФОРИСТИК** *с.* Тапҡыр, ҡыҫҡа әйтелешле.

**АФРИКАН** *и.* **1.** Африка материгының төп халҡы һәм шул халыҡтың бер кешеһе.

**А́ФФИКС** [*рус.* ⟨ *лат.*] *и.* *лингв.* Үҙенең грамматик мәғәнәһе булып, һүҙҙең тамырына үҙгәреш индерә торған һүҙҙең бер өлөшө; ялғау. *Һүҙ үҙгәртеүсе аффикстар. Һүҙ яһаусы аффикстар.*

**АФӘТ** *и. кар.* **афат.**

**АХ** *ымл.* **1.** Үкенгәндә әйтелә. *Ах, был уйҙар! Ниңә башта Сәйҙел күңеленә килмәгән!* Ғ. Сәләм.

**2.** Асыуланған, янаған, әрләгән саҡта әйтелә. *[Әбей — ҡыҙҙарына:] Ах, һеҙ хәсрәттәр! Башыма бәлә генә булдығыҙ* (Әкиәттән).

**3.** Һоҡланғанда, кинәнеп шатланғанда әйтелә. *[Юлия:] Ах һин, Ишбулды Байгузин туғанҡайым, ниндәй ҙур егет булғанһың!* Һ. Дәүләтшина.

◆ **Ах итеү** өҙөлөп, ҡурсып тороу. *Килендәре, кейәүҙәре лә һәйбәт булып сыҡты. Зөләйфә өсөн ах итеп торалар.* С. Агиш.

**АХАҠ** *и. кар.* **аҡыҡ.**

**АХА-ХА** *ымл.* Ҡысҡырып көлөүҙе белдерә.

**АХАХАЙЛАУ** *к.* Аха-ха тип ҡысҡырыу (көлгәндә). *Ахахайлап көлөү.*

**АХ-ВАХ, ах та вах** *ымл.* Ныҡ өҙгөләнгән, көйөнгәнде белдерә. *Ах та вах килеү.* ■ *Ай-һай ҙа ғына тимәй көй табылмай, ах-вах итмәй хәсрәт яҙылмай* (Халыҡ йырынан).

**АХМАҠ** *и.* Аҡылға кәм кеше; алйот, иҫәр./ Әрләп, шелтәләгәндә әйтелә. *Кит, ахмаҡ, туҙға яҙмағанды һөйләйһең.*

● *Аҡыллы тәкә һуйғанда, ахмаҡ йоҡа һуйыр.* Мәҡәл.

**АХМАҠЛАНДЫРЫУ** *к.* Алдап, томалап, аңраға әйләндереү. *[Буржуалар] .. төрлө илдәрҙәге эшселәрҙе ахмаҡландырыу, уларҙың бер-лектәрен емереү юлы менән һәләк була торған капиталистик төҙөлөштө ҡотҡарыу өсөн һуғышалар.* Д. Юлтый.

**АХМАҠЛАНЫУ** *к.* **1.** Еңел аҡыл менән уйлау, ахмаҡлыҡ ҡылыу. *Ахмаҡланып, уҡымай ҡалды.*

**2.** Ахмаҡҡа әйләнеү; алйотланыу, иҫәрләнеү.

**АХМАЛ** [*ғәр.*]: **ахмалға төшөү** ныҡ ашығып, ауыр эшләп, хәлдән тайыу. *Сана һөйрәп, ахмалға төшөп ҡайттым.*

**АХУН** [*фарс.*] *и.* **1.** Шәриғәт, мәсет эштәрен күҙәтеп, хәл итеп торған юғары дәрәжәле дин әһеле. *Мулла ахунға барып, Ырыҫбай өҫтөнән ялыу бирҙе, хәлде һөйләне, ти* (Әкиәттән). *Абдулла ахун ил аралап, һалым һалған һәр йортҡа* (Халыҡ йырынан).

**2.** (*баш хәреф менән*) Ир-ат исеме.

**АХ-УХ, ах та ух** *ымл.* **1.** Көсөргәнеп хәл бөткәнде белдерә. *Ах-ух итеү. Ах та ух килеү.*

**2.** Ауырып, һыҙланып ныҡ ыңғырашҡанды белдерә. *Билен имгәтеп, ах та ух итеп ята.*

**АХШАМ** *и. кар.* **аҡшам.**

**АХЫЛДАТЫУ** *к.* Хәлен бөтөрөп, ах та ух иттереү.

**АХЫЛДАУ** *к.* Ах та ух итеү, ах та ух килеү. *Ахылдап илау.* ■ *Ахылдап .. Шәхми ҡайтып инде.* Т. Йәнәби.

● *Анаһы ахылдағанса, балаһы илаған яҡшы.* Мәҡәл.

**АХЫЛДАШЫУ** *к. урт. кар.* **ахылдау.**

**АХЫМСЫ** *и. диал.* Эсеп боларған кеше.

**АХЫМСЫЛАУ** *к. диал.* Эсеп боларыу.

**АХЫР** [1] [*ғәр.*] *и.* Эш-хәлдең, ваҡыттың тамамланған мәле; аҙаҡ. *Көндөң ахыры. Эштең ахыры.* ■ *Уйға урынлашҡан иҫемдең барын түктем шулай, түгелә-сәселә, аҡрын-аҡрын ахырына еттем шулай.* Ш. Бабич.

◆ **Ахыр сиктә** күпмелер ваҡыт үткәс, һуңғы сиктә. *Көнө буйы шаярып, ахыр сиктә илашып ҡуйҙылар.* **Ахыр заман** *кар.* **заман.**

**АХЫР** [2] *р. кар.* **ахыры** [1].

**АХЫРҒЫ** *с.* Аҙаҡҡы, һуңғы. *Ахырғы һүҙ.* ■ *— Йә, туғанҡай, иҫән бул, минең иртәгә ахырғы көнөм* (Әкиәттән).

**АХЫРҘА** *р. кар.* **ахыры** [1]. *Уралбай икһеҙ-сикһеҙ далалар үткән, бик күп һыу кискән. Ахырҙа каруан көнсығыштағы бер илгә барып еткән* (Әкиәттән).

**АХЫРЫ** [1] *р.* **1.** Ниндәйҙер эш, мәлдән һуң; һуңынан. *Ошо ҡурҡҡандан ахыры теге әбей бер ергә лә сыҡмай өйҙә ултыра* (Әкиәттән).

**2.** Күпмелер ваҡыт үтеүгә; аҙаҡ сиктә. *Ахыры Аҙнагол килмәҫ була. Бер йыл үтә. Аҙнагол күренмәй.* З. Биишева.

**АХЫРЫ** [2] *инш.* Икеләнеүҙе, фаразды белдерә. *Йылтлап уйнай ҡуҡтә йондоҙҙар. Ахыры, осҡондарға дуҫ улар.* Ғ. Амантай. *Әсәһе [Кәримдең] ҡайтҡанын оҙаҡ көткәндер, ахыры. Ҡапҡа менән соланды ла бикләмәгән.* Я. Хамматов.

**АХЫРЫҺЫ** *инш. кар.* **ахыры** [2].

**АҺ** *ымл.* **1.** Ғазап-зарҙы белдерә. *Алты йыл, аһ! Һәр йылым — зиндан, дозах.* Ш. Бабич.// *Ҡурай моңо ир аҙаматының аһы булып сыҡты.* Ә. Вахитов. *Юҡтырһың да алла! Әгәр булһаң, .. ишетер инең аһ һәм зарҙарҙы.* М. Ғафури.

**2.** Аптыраған, ғәжәпкә ҡалғанды белдерә. *[Мәғфүрә:] Аһ, өлкән еңгә, аяғыңа ни булды, ауырттырҙыңмы әллә?* Һ. Дәүләтшина. *[Миңһылыу:] Аһ! Исемемде лә беләсе!* Р. Солтангәрәев. **Аһ итеү** 1) бик ныҡ аптырау. *Ит баҙары йыйылды. Итсе күрҙе — аһ итте.* К. Мәргән; 2) кем өсөндөр өҙөлөү. *Аһ итеп тороу.* **Аһ ороу** зарланыу, ныҡ хәсрәтләнеү. *Ҡайғы баҫты ауыл өҫтөн, аһ оралыр, ил илай* (Бәйеттән).

**АҺА** *ымл. кар.* **аһ-аһ.**

**АҺАҠТАУ** *к. диал.* Ахылдау.

**АҺАҢ** *и. кар.* **аһәң.**

**АҺ-АҺ** *ымл.* Аптырағанда әйтелә.— *Аһ-аһ, Закир түгелме һуң был?* З. Биишева.

**АҺА-ҺАЙ** *ымл.* Мыҫҡыллап көлгәндә белдерә. **Аһа-һай һалып көлөү** бик ныҡ көлөү.

**АҺАҺАЙЛАУ** *к.* Аһа-һай тип ҡысҡырыу (көлгәндә); ҡысҡырып көлөү. *Аһаһайлап көлөү.*

**АҺ-ВАҺ**, **аһ та ваһ** *ымл. кар.* **ах-вах.**

**АҺ-ЗАР** *и.* Ғазаплы тәрән ҡайғы; ҡайғы-хәсрәт. *Ул [Сафия] үҙе киткән, тик бында ләғнәтле асы күҙ йәштәрен тамыҙып, аһ-зарҙарының әҙҙәрен ҡалдырып киткән ине шул.* **М.** Ғафури. *Яҙып алам үткәндең барын, башҡорт ҡатынының аһ-зарын.* М. Хәй.

**АҺЫЛДАУ** *к. кар.* **ахылдау.** *Сәлимә йоҡоһонан тертләп уянып китте лә, йүгереп хәле бөткән кеше һымаҡ, аһылдап тороп ултырҙы.* З. Биишева.

**АҺӘҢ** [*фарс.*] *и. шиғр.* **1.** Килешле, яғымлы, матур көй. *Ирәндек ҡурайы концерттың үҙәгендә булды. Ул иң киткес моңло аһәңе менән күңелдәрҙе яулап алды.* Н. Иҙелбай./Шиғырҙың матур һүҙҙәрҙән ҡоролған яғымлы яңғырашы.

**2.** *күсм.* Үҙ-ара ярашлы килешеп торған матурлыҡ. *Тәбиғәттең шундай камил, аһәң булыуына хайран ҡалаһың.* Н. Нәжми.

**АҺӘҢДӘШ** *с.* Үҙ-ара ярашлы, килешле (өн-ауазға ҡарата).

**АҺӘҢДӘШЛЕК** *и.* Өн-ауаздың ярашлылығы, килешлеге; консонанс.

**АҺӘҢДӘШҺЕҘ** *с.* Үҙ-ара ярашһыҙ, килешһеҙ (өн-ауазға ҡарата).

**АҺӘҢДӘШҺЕҘЛЕК** *и.* Өн-ауаздың, ярашһыҙлығы, килешһеҙлеге; диссонанс.

**АҺӘҢЛЕ** *с.* Матур яңғырашлы. *Аһәңле йыр.*

**АЦЕТИЛЕ́Н** [*рус.* ⟨ *лат.*] *и.* Углерод менән водородтан торған ағыулы төҫһөҙ газ.

**АЦЕТО́Н** [*рус.* ⟨ *лат.*] *и.* Төҫһөҙ шыйыҡлыҡ рәүешендәге органик ҡушылма (производствоның төрлө тармағында иреткес сифатында ҡулланыла).

**АЦИДОФИЛИ́Н** [*рус.* ⟨ *лат.*] *и.* Ҡатыҡтың үҙенә башҡа бактерия менән әсетелгән бер төрө.

**АШ** [1] *и.* **1.** Кеше туҡлана торған һәр төрлө нәмә; аҙыҡ, ашамлыҡ, ризыҡ. *Иртәнге аш. Киске аш. Төшкө аш. Байрам ашы. Ҡунаҡ ашы. Туй ашы. Үтемле аш. Аш һеңдереү.* ■ *Бөгөн Гөлбостан еңгә иртәнсәктән бирле балалары менән бер .. төйөрөм аш йотҡаны юҡ.* Ғ. Дәүләтшин. **Аш бешереүсе** ашханала аш бешергән кеше. **Аш көҫәү** ниндәйҙер бер ашамлыҡ теләү (ауырлы ҡатындарҙа, ауырыу кешеләрҙә була). **Ауыҙға аш алыу** ашау. *Аҡназар әҙ-әҙләп ауыҙына аш ала башлай* (Әкиәттән). **Урын ашы** йәш-елкенсәк йыйылып бешергән аулаҡ ашы. *Бик күп уйнағас, ҡыҙҙар урын ашы бешерергә булдылар, ти* (Әкиәттән).

**2.** Һурпалы ашамлыҡ. *Ит ашы. Һөт ашы. Кәбеҫтә ашы. Аш бешереү. Аш һалыу. Аш өлгөртөү. Аш яраштырыу.* ■ *Минең танауға кәбеҫтәле аш еҫтәре бәрелде.* Д. Юлтый. **Ҡыҫыр аш** *йәки* **һыу ашы** итһеҙ аш. *Әсәйем сәйҙе лә [ҡаҙанда] ҡайната, кискә ҡарай ҡыҫыр ашты ла шунда бешерә.* М. Ғафури.

**3.** *диал.* Ашлыҡ, иген. *Буралағы тулы ашыңды ашатмаҫ та булдың, атаҡайым* (Сеңләүҙән).

◆ **Аш арба** (*йәки* **сана**) туйға күстәнәс тейәп алып килгән арба йәки сана. **Аш урынына таш йоттороу** ашап ултырғанда бик тынғыһыҙлау, борсоу. *Вәкиһә ханым минең ҡолаҡ итен сәйнәргә тотондо. Иртә-кисен аш урынына таш йоттора.* С. Кулибай. **Аш биреп, ҡаш биреп тороу** хөрмәт күрһәтеү.

**АШ** [2] *и.* Туҡыма тауарға һеңдерелгән крахмал. *Яңы күлдәгеңде йыуып кей, ашы бөтһөн.*

**АШ** [3] *и. диал.* Эрен. *Бармағым аш йыйып, һыҙлап тора.*

**АША** [1] (*бәйл. төп клш. менән*) **1.** Бер ситтән икенсе ситкә түбәндән; арҡыры. *Болон аша. Йылға аша. Юл аша.* ■ *Бынан күп йыл элек Урал аша бер поезда китеп барабыҙ.* Ғ. Сәләм. *Ағиҙелдә аша кисмәнем, һыуҡайҙарын уның эсмәнем* (Халыҡ йырынан).

**2.** Бер нәмәнән икенсе нәмәгә өҫтән, үрҙән. *Ҡойма аша. Яурын аша. Аша һалыу.* ■ *Һауаға атҡан уҡҡайым тау-урмандар аша уҙһасы.* Салауат Юлаев. *Пулялар, бомбалар беҙҙән аша төшә.* Д. Юлтый./Исемдән һуң эйәлек формаһында килеп, ике аралағы арауыҡты белдерә. *Тауҙар ашаһынан трактор тауышы килә.*

**3.** Бер яҡтан икенсе яҡҡа үтәләй. *Быяла аша. Күҙлек аша. Тәҙрә аша. Сепрәк аша. Күршеләрҙең һөйләшкәне стена аша ишетелеп тора.*

**4.** Билдәле бер ваҡыт араһы үткән һайын ҡабатланып торған эш-хәлде белдереү өсөн ҡулланыла. *Аҙна аша. Көн аша.*/Билдәле бер арауыҡты үтеп. *Магазин бер өй аша.*

**5.** (*эйл. клш.-дәге зат алмашы менән*) Кеше йәки бер сара ярҙамында; арҡыры. *Газета аша. Радио аша. Хат аша. Минең телефон аша һөйләшеп алды.*/Берәй ысул ярҙамында. *Киләсәккә, матур көндәргә көрәш аша ғына киленә.* Х. Ҡунаҡбай.

◆ **Аша һуҡтырыу** *кар.* **һуҡтырыу. Баш аша** тәкмәсләп. *Баш аша әйләнеү.* **Баштан аша** башты тотош ҡаплап. *Баштан аша бөркәнеү. Баштан аша һыу ҡойоу.*

**АША** [2] *и.* Ау [1] бәйләй торған ағас энә.

**АШАҠЛАУ** *к. диал.* Ашатлау.

**АШАҠТАНЫУ** *к. диал.* Ашатланыу.

**АШАЛАЙ** *к. кар.* **аша** [1] 2.

**АШАЛЫУ** [1] *к. төш. кар.* **ашау** [1]. *Аш ашалды.*

**АШАЛЫУ** [2] *к.* **1.** Ышҡылып, ҡырылып йоҡарыу. *Күсәр ашала. Табан ашала.*/Өңөлөп емерелеү. *Тау ашала. Яр ашала.*

**2.** *күсм.* Төҫө бөтөү; уңыу. *Көнгә ашалған кейем.*

**АШАМ** *и. диал.* Ашамлыҡ, яҙыҡ.

**АША-МАША** *р.* Унда-бында бер. *Аша-маша баҫыу. Аша-маша һикереү.*

**АШАМЛЫҠ** *и.* Ашай торған нәмә; аҙыҡ, ризыҡ. *Сания апай беҙгә сәй яһай, өҫтәлдәге ашамлыҡтарҙы ашарға бигерәк тә мине ҡыҫтай.* С. Агиш.

**АШАМЛЫҠ-ЭСЕМЛЕК** *и. йыйн.* Ашай, эсә торған төрлө нәмә; ризыҡ. *Табын әҙер ине. Ашамлыҡ-эсемлек ҡуйылған өҫтәл тирәләп ултырыштылар.* Я. Вәлиев.

**АШАМҺАҠ** *с.* Ашауға шәп, күп ашай торған. *Ашамһаҡ кеше. Ашамһаҡ мал.*

**АШАНАН-АША** *р.* Бер ситтән икенсе ситкә еткәнсә. *Ашанан-аша бурәнә һалыу. Күлде ашанан-аша йөҙөп сығыу.*

**АШАНТЫ** *и. диал.* Ашамлыҡ.

**АШАНЫУ** *к.* Ниҙер ашау. *Ашанып йөрөү. Ашанып ултырыу.* ■ *Кейеҙбай кәкре ҡарама төбөндә ашанып, тамаҡ туйҙырып алды* (Әкиәттән).

**АШАП-ЭСЕҮ** *к.* Тамаҡ туйҙырыу. *Бар ине, аһ, Мәрфуғаны күргән саҡтар, .. шул ғүзәлде уйлай-уйлай иҫтән тайып, нисә көндәр ашап--эсмәй йөрөгән саҡтар!* Ш. Бабич.

**АШАТЛАНЫУ** *к. һөйл.* Һыңар аяҡты нимәнәндер аша һалыу, аша атланыу. *Ашатланып ултырыу.*

**АШАТЛАУ** *к. һөйл.* **1.** Ниҙәндер аша атлау, аша баҫыу. *Бүрәнәне ашатлау. Соҡорҙо ашатлау.* ■ *[Иштуған] түпһаны ашатлағас, ҡараңғыла бер ни айырмай, аҙыраҡ баҫып торҙо.* Ф. Иҫәнғолов.

**2.** *күсм.* Иҫәпкә алмай, ситкә ҡағыу. *Законды ашатлау.* ■ *[Иҫәнбирҙе:] Бәләкәс кенә етешһеҙлектәрҙе лә ашатлап уҙып булмай.* С. Агиш.

**АШАТЫЛЫУ** *к. төш. ҡар.* **ашау** [1] 1.

**АШАТЫУ** *к.* **1.** Ашарға биреп туйындырыу. *Баланы ашатыу. Өмәселәрҙе ашатыу.* ■ *Еҙбо-лан тигән тәрән соҡорҙо үткәс, атты туғарып ебәреп ашаттыҡ.* Ғ. Ғүмәр.

**2.** Аҙыҡ менән тәьмин итеү; аҙыҡландырып йәшәтеү. *Бер үҙе биш бала ашата.*

◆ **Тапҡанды эттән ашатыу** *йәки* **арҡаны беттән ашатыу** *ҡар.* **табыу.**

● *Үгәй әсә ураҙа тоттора, ашатһа ла ҡоҫтора.* Мәҡәл.

**АШАУ** [1] *к.* **1.** Туҡлыҡ өсөн аҙыҡ йотоу; аҙыҡланыу, туҡланыу. *Аш ашау. Ит ашау. Тамаҡҡа ашау. Туйғанса ашау.* ■ *Турысай ҙа атым ай ашамай, таңға яҡын ятып юшамай* (Халыҡ йырынан)./Аҙыҡ итеп файҙаланыу. *Ул сусҡа итен ашамай./күсм.* Ныҡ әрләп ҡыйырһытыу. *Ашап алып барыу.*

**2.** Кимереп, ҡырҡып тишкеләү. *Алманы ҡорт ашаған. Кейемде көйә ашаған.*

**3.** *күсм. һөйл.* Тапҡан, килеп торған аҡса, мал иҫәбенә йәшәү. *Тапҡан аҡсаны ашап бөтөп тороу. // Аҡса ашау. Пенсия ашау.*

**4.** *күсм. һөйл.* Үҙеңә тейеш түгелде үҙләштереү. *Кеше хаҡын ашау.* ■ *[Моҡай:] Харрас бай күпер һалырға тип халыҡтан йыйған аҡсаны ашаны.* Х. Ибраһимов.

◆ **Ауыҙынан сыҡҡанды эт ашамаҫ** *ҡар.* **ауыҙ. Ашаған табағыңа төкөрөү** *ҡар.* **табаҡ** [1]. **Ашап туйғыһыҙ** бик тәмле. *Бешереп килтерһәләр — кинйә улының кәләше бешергән икмәк ашап туйғыһыҙ* (Әкиәттән). **Ашарға һорамай** кәрәкһеҙ кеүек нәмәне ташларға теләмәгәндә эйтелә. *[Зөфәр:] Олатай, был иҫке биҙрә ҡолағы ниңә кәрәк ул? [Ҡарт:] Ята бирһен, ашарға һорамай бит!* Ә. Харисов. **Ашарҙай булыу** ныҡ асыуланыу, нәфрәтләнеү. *Был ике студенттың бер-береһен[ә нишләп] ашарҙай булып ҡарағанын беҙ аңлай алмайбыҙ.* К. Мәргән. **Башты ашау** *ҡар.* **баш** [1]. **Бер аяғын атлағанса, икенсеһен эт ашай** ығыш, яй кешегә ҡарата әйтелә. **Бүре** (*йәки* **айыу) башы ашарҙай булыу** бик ныҡ аҫығыу. **Бысағын ашаған** *ҡар.* **бысаҡ. Йөрәк итен ашау** *ҡар.* **йөрәк. Йәнде ашау** *ҡар.* **йән. Ҡолаҡ итен ашау** *ҡар.* **ҡолаҡ. Өтөп ашап барыу** *ҡар.* **өтөү. Өтөп ашамаҫтар** *ҡар.* **өтөү. Ташын ашау** *ҡар.* **таш. Телеңде сөсө ашағыр** *ҡар.* **тел. Терелэй [тотоп] ашау** *ҡар.* **терелэй. Шайтан ашағыр[ы]** *ҡар.* **шайтан. Эт ашаһын** *ҡар.* **эт.**

● *Ит ашаһаң — дарыу, күп ашаһаң — ағыу.* Мәҡәл. *Көтөүҙән айырылған ҡуйҙы бүре ашар.* Мәҡәл.

**АШАУ** [2] *к.* **1.** Өйкәп, ҡырып йоҡартыу. *Тәгәрмәстең тимере күсәрҙе ашаған.*

**2.** Йыуып, өңөп емереү; умырыу. *Йылға ярҙы ашаған.*

**3.** Йылылыҡ тәьҫире йәки химик тәьҫир менән **уйыу, ҡырҡыу.** *Тут тимерҙе ашай. Кислота кейемде ашай.* ■ *Яҙғы елдәр ҡарҙы туҡтауһыҙ ашаған* (Әкиәттән).

**4.** *күсм.* Нәмәнең төҫөн алыу; уңдырыу. *Байрам, өйгә инеп, көн ашаған йәшкелт фуражкаһын сөйгә элде.* Р. Низамов.

**АШАШЫУ** *к. урт. ҡар.* **ашау** [1] 1, 3. *Прокурорға килгән күстәнәстәрҙе ашашам, сөнки уға әле һаман да диетала йәшәргә ҡушалар.* С. Агиш.

**АШАЯҠ** *и. диал.* Ҡаҙанлыҡ. *Бабай еңелсә генә атлап ашаяҡҡа сыҡты. Күп тә үтмәне, борхоп торған самауыр киң өҫтәлгә килеп ултырҙы.* Ә. Вахитов.

**АШҠАБАҠ** *и. шул уҡ* **аш ҡабағы** (*ҡар.* **ҡабаҡ** [2]).

**АШҠАҘАН** *и.* Кеше һәм хайуандарҙың аҙыҡ эшкәртеү ағзаһы. *Ашҡаҙан һуты.*

**АШҠАҘАН-ЭСӘК** *и. йыйн.* Ашҡаҙан һәм эсәктәр. *Ашҡаҙан-эсәк ауырыуҙары.*

**АШҠАҠ** *и. диал.* **1.** *ҡар.* **сираҡ** [1]. *Ҡоҙағый килә тиҙәр аръяҡтан, тире туны уның ашҡаҡтан* (Сеңләүҙән)./Бәкәл.

**2.** *күсм.* Нәҙәк оҙон кеше.

**АШҠАЯҠ** [1] *с.* Ҡабығы еңел ҡубыусан (яҙғы ағасҡа ҡарата). *[Баҡый халҡы] йүкә ағасы ашҡаяҡ саҡта, кем уҙарҙан һалабаш төшөргән.* Ж. Кейекбаев.

**АШҠАЯҠ** [2] *и.* **1.** Әрсеп киптерелгән ағас (ҡайын, йүкә һ. б.).

**2.** Яҙғы ағас әрсеү эше. *Ашҡаяҡ ваҡыты. Ашҡаяҡҡа барыу.*

**АШҠАЯҠЛАНЫУ** *к.* Ҡабығы еңел ҡубыусанға әйләнеү. *Ағас ашҡаяҡланған ваҡыт.*

**АШҠАЯҠЛАУ** *к.* **1.** Яҙын ағас ҡабығын әрсеү. *Өйлөк бүрәнә ашҡаяҡлап ҡайттыҡ.*

**2.** *күсм.* Сыбыҡ, сыбыртҡы менән туҡмау; һыҙырыу, ҡайыҙлау. *Беҙ ҡасҡан йылҡы, һыйырҙарҙы буран уйнатып ҡыуып, киндерҙән ишелгән оҙон сыбыртҡы менән ашҡаяҡлап, мал араһына индерәбеҙ.* Ш. Шәһәр.

**АШҠЫН** *с.* Ашҡынып торған; ярһыу. *Ашҡын йөрәк. Ашҡын күңел. Ашҡын хистәр.*

**АШҠЫНДЫРЫУ** *к.* **1.** Йөрәкһетеп ынтылдырыу; ярһытып, елкендереү. *Ашҡындыра, уйландыра кәкүк тауышы... Ҡыҙ йөрәген елкендерә ҡайғы-һағышы.* Б. Бикбай.

**2.** *эйһ. ҡар.* **ашҡыныу** 1. *Ашҡындырып тик тора.*

**АШҠЫНЫУ** *к.* **1.** Йөрәкһеп иммәгәләр ынтылыу; ярһыу. *Сәлимдең күҙҙәре ут булып яна, йөрәге һикерә, ашҡына ине.* Н. Ҡәрип. *Батша өтәләнеп, күрергә ашҡынып, ҡумтаны аса* (Әкиәттән).

2. *диал. кар.* **аҙыу**[2] 5. *Тимрәү ашҡынған.* ■ *Күҙ ауырыуы ашҡынып китһә, аҡ һалмаһын өсөн, ҡара сепрәккә аҡыҡ тағып, күҙгә бәйләп ҡуялар.*

**АШҠЫНЫУЛЫ** *с. кар.* **ашҡын.**

**АШЛАМА**[1] *и.* Үҫемлектәрҙе туҡландырыу һәм уңышын күтәреү өсөн тупраҡҡа ҡушыла торған төрлө матдә. *Баҫыуға ашлама сығарыу. Минераль ашлама. Органик ашлама.*

**АШЛАМА**[2] *и. диал.* Ямау.

**АШЛАМАЛАУ** *ҡ. кар.* **ашлау**[2].

**АШЛАНЫУ**[1] *ҡ. төш. кар.* **ашлау**[2].

● *Ашланған ер аш бирер, ташланған ер таш бирер.* Мәҡәл.

**АШЛАНЫУ**[2] *ҡ. төш. кар.* **ашлау**[3]. *Ашланған буй ебе.*

**АШЛАНЫУ**[3] *ҡ. төш. кар.* **ашлау**[4].

**АШЛАНЫУ**[4] *ҡ. диал.* Эренләү.

**АШЛАТЫУ**[1] *ҡ. йөкм. кар.* **ашлау**[2].

**АШЛАТЫУ**[2] *ҡ. йөкм. кар.* **ашлау**[3].

**АШЛАТЫУ**[3] *ҡ. йөкм. кар.* **ашлау**[4].

**АШЛАУ**[1] *и.* **1.** Ҙур ағас һауыт. *Бисәләр бер ашлау бутҡа бешереп, уртаһына бер йомғаҡ май һалып, килтереп ултырттылар, ти* (Әкиәттән).

**2.** *диал.* Мал ялғашы.

**АШЛАУ**[2] *ҡ.* Тупраҡҡа ашлама индереү. *Ерҙе ашлау. Өҫтәмә рәүештә ашлау.*

**АШЛАУ**[3] *ҡ.* Буйлыҡ епте йәки туҡыманы крахмаллау.

**АШЛАУ**[4] *ҡ.* **1.** Бер емеш ағасының ботағын икенсе емеш ағасының төбөнә еҡләп ултыртыу. *Урман алмаһына баҡса алмаһын ашлау.*

**2.** *иҫк.* Энә менән сәнсеп тәнгә дарыу ебәреү; укол ҡаҙау. *Малды түләмәгә ҡаршы ашлаған өсөн докторҙар аҡса алмай, хөкүмәт дарыуҙы бушлай бирә.* Ф. Төхфәтуллин.

**3.** *диал.* Һап ҡуйыу; һаплау. *Салғыны ашлау. Балтаны ашлау.*/Үҙ урынына ҡуйыу. *Рамды тәҙрәгә ашлау.*

**АШЛЫ** *с.* Крахмалға манылған, крахмал һеңдерелгән. *Ашлы тауар.*

**АШЛЫҠ** *и.* **1.** Он, ярма өсөн үҫтерелгән ауыл хужалығы үҫемлеге; иген. *Ашлыҡ сабыу. Ашлыҡ утау. Ашлыҡ һуғыу.* ■ *Баҫыуҙарҙа ашлыҡ тулҡынлана, йәки ҡәшел, йә күк төҫ алып.* Ғ. Сәләм. **Көҙгө ашлыҡ** *йәки* **ужым ашлығы** көҙ сәселә торған ашлыҡ. **Тос ашлыҡ** таҙартылған ашлыҡ. **Яҙғы** (*йәки* **һабан**) **ашлыҡ** яҙ сәселә торған ашлыҡ.

**2.** Шул үҫемлектең аҙыҡҡа файҙаланылған орлоғо. *Келәт тулды ашлыҡҡа, бейештеләр шатлыҡҡа.* Ғ. Амантай.

**АШМАНСЫ** *и. кар.* **ашнаҡсы.**

**АШНАҠ** *и.* Йәй көнө аш-һыу әҙерләй торған ҡоролма; аласыҡ.

**АШНАҠСЫ** *и.* Аш-һыу әҙерләүсе; аш бешереүсе; ашсы. *Алты ашнаҡсы ҙур бал мискәһе тәгәрләтеп сығара.* М. Кәрим.

● *Йыртанас кеше йырсы булған, ашамһаҡ кеше ашнаҡсы булған.* Мәҡәл.

**АШСЫ** *и. кар.* **ашнаҡсы.**

**АШТАБАҠ** *и.* Сеүәтәгә ҡарағанда ҙурыраҡ һауыт. *Хужа ҙур бер аштабаҡ ҡатыҡ, өс икмәк килтергән. Юлаусы быларҙы ла һыпырған* (Әкиәттән).

**АШТЫРЫУ** *ҡ.* **1.** Ситенән аша сығарып тултырыу; артылдырыу. *Аштырғанса ҡойоу.*

**2.** *күсм.* Һөйләгәндә булмағанды өҫтәү; арттырыу. *Һәр бер һөйләүсе йәки йырлаусы отоп алған йырына йә әкиәтенә үҙенән яңы һүҙҙәр ҡушып, арттырып, аштырып һөйләй.* Ғ. Амантай.

**АШХАНА** *и.* Күмәк халыҡ туҡлана торған урын. *Диетик ашхана. Йәйге ашхана.* ■ *Миңлебай Нәжипич мине ҡайһы сакта, бигерәк тә ял көндәрендә, ашханаға төшкө ашҡа саҡыра.* З. Биишева.

**АШҺЫНЫУ** *ҡ.* Яҡшы аҙыҡҡа һанау, ашҡа һанау. *Ашһынып ашау.*

**АШ-ҺЫУ** *и.* Ашарға әҙерләнгән аҙыҡ. *Ашһыуға оҫта.* ■ *Байбикәнең аш-һыуына ил дә түйыр, ир ҙә түйыр, ҡош та түйыр.* Т. Хәйбуллин.

**АШ-ҺЫУСЫ** *и. һөйл.* Аш-һыу әҙерләүсе; аш бешереүсе. *[Аҡназарҙың] тамағына аш үтмәй башлай, каланың иң оҫта аш-һыусыларын саҡыртып, төрлө ашамлыҡтар бешереп ҡарайҙар* (Әкиәттән).

**АШЪЯУЛЫҠ** *и.* Табын уртаһына түшәй торған йәймә. *Ашъяулыҡты йыйыу.* ■ *[Хәйруш] урындыҡҡа ашъяулыҡ йәйеп, тәрилкә менән икмәк, тоҙ, стакан килтереп ҡуя.* Ҡ. Даян.

**АШЫҒЫС** *с.* Етеҙлек, тиҙлек талап иткән; кисектергеһеҙ. *Ашығыс операция. Ашығыс телеграмма. Ашығыс эш. Ашығыс ярҙам.* // *Ашығыс сығып китеү.*

**АШЫҒЫСЛЫҠ** *и.* Етеҙлек, тиҙлек. *Ашығыслыҡ күрһәтеү.*

**АШЫҒЫУ** (ашыҡ≠) *ҡ.* Етеҙ, тиҙ ҡуҙғалыу, тиҙ булырға тырышыу; ҡабаланыу. *Аръяҡ остан ашығып бирәү килә — минең йәнкәйемдең атлауы* (Халыҡ йырынан).

● *Ашыҡҡан арыр, әкрен һаман барыр.* Мәҡәл.

**АШЫҠ**[1] [*гәр.*] *и.* **1.** Малдың бәкәл быуынындағы ваҡ һөйәк; бәкәлсәй.

**2.** Уйын өсөн файҙаланылған шул һөйәк. *Ҡуҙыйкүрпәс уйындан һуң балаларҙың ашыҡтарын, буралары талап ҡайтып китә.* «Ҡуҙыйкүрпәс менән Маянһылыу». / Шул һөйәк менән уйнаған балалар уйыны. *Ашыҡ уйнау. Ашыҡ һуғыу.* ■ *Атаһы улына алтын ашыҡ биргән* (Әкиәттән).

♦ **Алтын ашыҡ** бик ҡәҙерле, ҡиммәтле нәмә. *Сабый саҡтан һәр кемгә алтын ашыҡ Уралтау.* А. Игебаев. **Шайтан ашығы** кеше аяғының түбәндәге сурайып торған һөйәге; бәкәл.

**АШЫҠ**[2] *р. диал. кар.* **артыҡ**[1] 3. *Ике тоннанан ашыҡ иген.*

**АШЫҠ-БОШОҠ** *р.* Тиҙ-тиҙ, ҡабалан. *Ашыҡбошоҡ эшләү.* ■ *[Хәсән] ашыҡ-бошоҡ ашаны ла, һеңлеһе Сәхибә янына Татырлыға китте.* С. Агиш.

**АШЫҠТЫРЫУ** *ҡ.* **1.** Эш-хәрәкәтте ашығыс итеү, тиҙләтеү. *Түйҙы ашыҡтырыу. Эште ашыҡтырыу.* ■ *Мин аҙымымды ашыҡтырҙым.* Д. Юлтый.

**2.** Тиҙ булырға ҡыҫтау; ҡабаландырыу. *Баланы мәктәпкә ашыҡтырыу. Ҡайтырға ашыҡтырыу. Эшкә ашыҡтырыу.*

**АШЫРЫЛЫУ** [1] *ҡ. төш. ҡар.* **ашырыу** [1].

**АШЫРЫЛЫУ** [2] *ҡ. төш. ҡар.* **ашырыу** [2].

**АШЫРЫУ** [1] *ҡ.* **1.** Ниндәйҙер сиктән, күләмдән үткәреү. *Саманан ашырыу.* ■ *Арыш уңышын һәр гектарҙан 30 центнерҙан ашырҙыҡ.* «Совет Башҡортостаны», 1986, 27 август.

**2.** Ниндәйҙер кимәлдән юғары күтәреү. *Болоттан ашырыу.*

**3.** Ниндәйҙер кимәлгә үрләтеү; күтәреү. *Һауаға ашырыу.*

**4.** Хәл ҡылымдың *-п* формаһында килгәндә, бәйләүес функцияһында ҡулланыла; аша, арҡыры.— *Атты тау ашырып ебәрҙем.* Һ. Дәүләтшина.

**АШЫРЫУ** [2] *ҡ.* Нимәгәлер ярағлы хәлгә килтереү; үтәү. *Бойомға ашырыу. Ғәмәлгә ашырыу. Кешенең үтенесен ашырыу. Тормошҡа ашырыу. Эшкә ашырыу.*

**АШЫУ** [1] *ҡ.* **1.** Ниндәйҙер сиктән, күләмдән артыу. *Саманан ашыу. Мал һаны меңдән ашты.*

**2.** Ниндәйҙер кимәлдән юғары күтәрелеү. *Болоттан ашыу. Ярҙан ашыу.* ■ *Салауаттың күргән ғазаптары ерҙән ашып, күккә олғашты* (Халыҡ йырынан). *Һүрәм генә һыуы ташты инде, тал башҡайҙарынан ашты инде* (Халыҡ йырынан).

**3.** Ниндәйҙер кимәлгә үрләү; күтәрелеү. *Бейеккә ашыу. Һауаға ашыу.* ■ *Ашыр булһаң, бейек тауҙарға аш.* М. Кәрим.

**4.** Үрләп, аша сығыу. *Һыртты ашыу.* ■ *Болотҡа еткән тауҙарҙы һикереп ашкан Аҡбуҙат.* «Аҡбуҙат».

♦ **Ашып киткән** бик күп. *Нимәгә һиңә мал, булғаны ла ашып киткән.* **Баштан ашыу** *ҡар.* **баш.** *Ҡәмәр әбейҙең ҡыуанысы башынан ашкан.* Ғ. Дәүләтшин. *[Барсынһылыу:] Батырлығың баштан ашкан, матурлығың һыуҙай ташкан.* «Алпамыша». **Күккә ашыу** *ҡар.* **күк** [3]. **Сиктән ашыу** *ҡар.* **сик** [1]. **Хаттин ашыу** *ҡар.* **хаттин.**

● *Ирҙән ашмаҡ бар, илдән ашмаҡ юҡ.* Әйтем.

**АШЫУ** [2] *ҡ.* Нимәгәлер ярағлы хәлгә килеү; үтәлеү. *Бойомға ашыу. Ғәмәлгә ашыу. Тормошҡа ашыу.* ■ *[Наташа:] Түккән күҙ йәштәрем, һораған теләктәремдең барыһы ла ҡабуллыҡҡа ашһа ине.* Д. Юлтый.

♦ **Эшкә ашмаған** эшкә ярамағаи; булдыҡһыҙ. *Эшкә ашмаған кеше.* **Эшкә ашыу** ярағлы булыу; ярау. *Был бүрәнә серегән, эшкә ашмай.*

**АШЫУ** [3] *р.* Билдәле бер саманан артыҡ. *Башҡортостан хеҙмәттә ҙур еңеүгә өлгәште. Хөкүмәт буралары 3 миллион тоннанан ашыу иген тапшырҙы.* «Совет Башҡортостаны», 1986, 5 сентябрь.

**АЭРА́ЦИЯ** [*рус.* ⟨*фр.*] *и.* Еллләтеү, һауа алмаштырыу. *Тупраҡ аэрацияһы.*

**АЭРОВОКЗА́Л** [*рус.*] *и.* Һауа транспорты пассажирҙарын хеҙмәтләндерә һәм багаждарын ҡабул итә торған бина. *Учалы, Инйәрҙә, Кананикольскийҙа, Моракта, Ҡыргыҙ-Миәкәлә яңы аэровокзалдар төҙөү планлаштырылды.* «Совет Башҡортостаны», 1969, 22 март.

**АЭРОДИНА́МИКА** [*рус.* ⟨*гр.*] *и.* Һауаның һәм башҡа газдарҙың хәрәкәте һәм шул хәрәкәттең есемдәргә булған йоғонтоһо тураһындағы фән.

**АЭРОДРО́М** [*рус.* <*фр.*] *и.* Осҡос аппараттарҙы осора һәм ултырта, ҡарай һәм хеҙмәтләндерә торған махсус майҙан. *Самолёт аэродромға илтеп төшөрҙө.*

**АЭРОКЛУ́Б** [*рус.* ⟨*гр.*] *и.* Самолётта осорға, парашют менән һикерергә өйрәнә торған махсус ойошма.

**АЭРОЛО́ГИЯ** [*рус.* ⟨*гр.*] *и.* Метеорологияның өҫкө атмосфера ҡатламының физик, химик һәм башҡа үҙенсәлектәрен өйрәнә торған бүлеге. *Аэрология станцияһы.*

**АЭРОПЛА́Н** [*рус.* ⟨*фр.*] *и.* Мотор көсө менән оса торған аппарат; самолёт. *Шунда ғына ултырып аэропланға, бәғрем Сөләй, һиңә осормон.* Ғ. Амантай.

**АЭРОПО́РТ** [*рус.* ⟨*гр.*] *и.* Һауа юлдары трассаһында урынлашҡан транспорт авиацияһының регуляр осошон тәьмин итеү өсөн бөтә кәрәк нәмә менән йыһазландырылған аэродром. *Өфө аэропорты.*

**АЭРОСАНА** [*рус.* аэросани] *и.* Һауа винты менән ҡар, боҙ өҫтөнән йөрөй торған сана. *Яланда аэросана йөҙ километрҙан артыҡ тиҙлек менән йөрөй.*

**АЭРОСТА́Т** [*рус.* ⟨*гр.*] *и.* Һауанан еңел газ тултырылған осҡос аппарат (дирижабль, һауа шары һ. б.).

**АЯ** [1] *и.* Дүрт бармаҡ киңлегендәге үлсәү берәмеге. *Бер ая. Ике ая.* ■ *Итенең ҡырҡмаға ҡараһы юҡ. Ҡабырға һырттары бер ая май, байғоштоң.* Һ. Дәүләтшина.

♦ **Ус аяһындай** *ҡар.* **ус.**

**АЯ** [2] *и.* Дебетте таҙартыу, тетеү өсөн ҡулланылған энә тараҡлы ҡорал.

**АЯҒӨҪТӨ** *р. шул уҡ* **аяҡ өҫтө** (*ҡар.* **аяҡ** [1]).

**АЯҒҮРӘ** *р. шул уҡ* **аяҡ үрә** (*ҡар.* **аяҡ** [1]).

**АЯҘ** [1] *с.* Болотһоҙ, асыҡ. *Аяҙ көн. Аяҙ төн. Салт аяҙ. Аяҙға тартыу. Аяҙға ултырыу.* ■ *Аяҙ күктән моңһоу ай ҡараған, нурҙар ҡайғы булып ташҡынған.* Х. Ҡунаҡбай.

**АЯҘ** [2] *и. диал.* Аҡлан.

**АЯҘАЙЫУ** *ҡ. ҡар.* **аяҙыу.**

**АЯҘЛАНЫУ** *ҡ. ҡар.* **аяҙыу.**

**АЯҘЛАУ** *ҡ.* Аяҙға әйләнеү; аяҙыу. *Көн аяҙлап, һыуытып ебәрҙе.*

**АЯҘЫТЫУ** *ҡ. ҡар.* **аяҙыу.** *Көн аяҙытып тора.*

**АЯҘЫУ** *ҡ.* Аяҙға ултырыу, асылыу. *Зөфәр Заготзерно янына килеп туҡтағанда, ямғыр баҫылып, көн аяҙыған ине.* Х. Ғиләжев.

**АЯҠ** [1] *и.* **1.** Кешенең, ҡош-ҡорттарҙың һәм ҡайһы бер хайуандарҙың баҫып йөрөү өсөн хеҙмәт итә торған ағзаһы. *Уң аяҡ. Һул аяҡ. Тайыш аяҡ. Сатан аяҡ. Аяҡ йөҙлөгө. Аяҡ табаны. Аяҡ атлау. Аяҡҡа кейеү.* **Ҡамыт аяҡ** кәкре аяҡ. **Аяҡ үрә** аяҡҡа баҫып, аяҡҡа баҫҡан көйө. *Аяҡ үрә тороу.* **Арҡыры аяҡ** аяғын арҡыры ҡуйып баҫа торған кеше. *[Сәхибә:] Ҡарт мулла, оятһыҙ мулла .. көмрө, арҡыры аяҡ.* Ғ. Хәйри. **Аяҡ ослап** аяҡтың осо менән генә баҫып. *Гөлйөҙөм аяҡ ослап ҡына ишеккә барҙы.* Ф. Иҫәнғолов. **Аяҡ өҫтө** аяҡҡа баҫҡан көйө. *Аяҡ өҫтө ашау.* **Аяҡ салыу** 1) аяҡты кеше юлына арҡыры ҡуйыу. *Аяҡ салып йығыу;* 2) *күсм.* эшкә ҡамасау яһау. *Эске һәм тышҡы*

*дошмандарҙың аяҡ салыуына ҡарамаҫтан, социализм ҡорабыҙ.* М. Ғафури. **Аяҡтан яҙыу** (*йәки* **ҡалыу**) атлай алмаҫ булыу.

**2.** Ултыртмалы нәмәләрҙең аҫтағы терәге; тояҡ. *Өҫтәл аяғы. Ултырғыс аяғы. Телевизор аяғы.*

♦ **Аяғын ҡыҫҡартыу** берәүҙе йөрөгән еренән биҙҙереү. *[Бойков — Игорға:] Был тирәлә тағы сыуалып йөрөйһө булһаң, аяғыңды ҡыҫҡартырбыҙ.* Ғ. Ибраһимов. **Аяғын тотоу** балаиы ярау иттереү. **Аяҡ аҫтына һалыу** *йәки* **аяҡ аҫтына һалып тапау** иҫәпкә алмай, ситкә ҡағыу. *Йоланы аяҡ аҫтына һалып тапау.* ■ *Мин ни карсыҡтың һүҙен аяҡ аҫтына һалып тапаманым, тыйнаҡ ҡына ултырҙым.* Р. Низамов. **Аяҡ аҫтында** 1) яҡында ғына, эргәлә; 2) кемдеңдер хакимлегендә; ҡул аҫтында. **Аяҡ атларға** (*йәки* **баҫырға**) **бирмәү** кешенең иркен ҡыҫыу; тынғы бирмәү.— *Бер ҙә шуға барғым килмәгәйне, аяҡ атларға бирмәй яусылатты бит.* Һ. Дәүләтшина. **Аяҡ баҫтырыу** яҡын юллатыу. **Аяҡҡа баҫтырыу** 1) күмәк хәрәкәткә килтереү.— *Мин хәҙәр ҡайтам да ауылды аяҡҡа баҫтырам, иртәгә барын да өмәгә сығарам.* М. Тажи; 2) ауыр хәлдән сығарыу, шәбәйтеү. *Заһиҙуллин ташландыҡ хәлгә ҡалған умарталығын аяҡҡа баҫтырырға тотонды. Бөтә көсөн шуға бирҙе.* «Совет Башҡортостаны», 1967, 9 апрель. **Аяҡ баҫыр урын юҡ** (*йәки* **ҡалмаған**) тығын, һыйыш юҡ. *Йомшаҡ автобуста аяҡ баҫыр урын ҡалмаған.* Ғ. Рамазанов. **Аяҡ баҫыу** 1) берәй ергә барыу; аяҡ атлау. *Ауыл ситендә бер емерек өй тороп ҡалған япа-яңғыҙы. Бер кем уға аяҡ баҫмай, эт-бесәйҙең хатта юҡ юлы.* Р. Ғарипов; 2) берәй эш-хәлгә аҙым яһау. *Ҡотла, яҙ, йәштәр мөхәббәтен, аяҡ баҫа улар тормошҡа.* Ғ. Сәләм. **Аяҡ ергә теймәү** бик шәп барыу, шәп йүгереү. *Мөмкин булған тиклем кейенгән булдым да, Зөләйха эргәһенә киттем. Аяҡ ергә теймәй, малай.* Т. Йәнәби. **Аяҡҡа баҫыу** 1) күмәк хәрәкәткә килеү, күтәрелеү. *Застава бик тиҙ аяҡҡа баҫты.* Ғ. Ибраһимов; 2) ауыр хәлдән сығыу, шәпләнеү. *Һуғышта емерелгән заводтар бер нисә йыл эсендә аяҡҡа баҫты. Аҡназар әҙләп-әҙләп ауыҙына аш ала башлай, йөҙөнә ҡыҙыллыҡ сыға, өс көн тигәндә аяҡҡа баҫа* (Әкиәттән). **Аяҡ ҡалмау** хәлдән тайып арыу. *Йәйәү килә-килә аяҡ ҡалманы.* **Аяҡтан баҫҡан** бөтә кеше, бөтә булған халыҡ. *[Нәҙерша:] Ҡул ҡаушырып тормағыҙ, аяҡтан баҫҡан ир-атын — барың атҡа менегеҙ* (Ҡобайырҙан). **Аяҡтан йығыу** 1) тора алмаҫлыҡ итеп һалыу. *Арытып аяҡтан йығыу;* 2) ауырыу итеп һалыу. *Тапма аяҡтан йыҡты;* 3) ауыр хәлгә төшөрөү, сараһыҙ итеү. *Быйыл беҙҙе бесән аяҡтан йыҡты.* **Аяҡ тартмау** ҡайҙалыр барырға теләк булмау.— *Ҡарамалыға кире барырға аяғым тартмай.* М. Тажи. **Аяҡ терәп [һөйләшеү]** үҙ көсөнә ныҡ ышанып һөйләшеү. *Минең кеүек ярлыябағай Зариф бай кеүектәр менән аяҡ терәп һөйләшә.* И. Ғиззәтуллин. **Аяҡ терәү** *ҡар.* **аяҡҡа баҫыу.** *Бәҙри ҡайтҡас тыуған ергә ҡултыҡ таяғына таянып ҡына аяҡ терәне.* «Совет Башҡортостаны», 1970, 22 февраль. **Аяҡ тибеү** 1) тибенеү. *Сәреү нисек ҡолаған — шул көйө аяғын да типмәй һуҙылып ята.* Т. Хәйбуллин; 2) яман ажарланыу. *Аяҡ тибеп ҡыҫҡырыу.* ■ *Аяҡ тибеп бер екерһәм, бесәй була иргенәм.* Ҡ. Даян. **Аяҡты ныҡҡа терәү** таяныс табып, үҙ һүҙендә ныҡ тороу. **Аяҡ һуҙыу** (*йәки* **һоноу**) *һөйл.* үлеү. *Бы-жырмәргән үгеҙҙе .. күтәреп бәрә. Үгеҙ шунда уҡ аяғын һуҙа* (Әкиәттән). **Аяҡ ялы** йомошҡа барған өсөп бирелә торған бер нәмә.— *Унда барыуҙың аяҡ ялы ла сыкманы, исмаһам, сәй ҙә эсермәнеләр.* **Бер аяғы ерҙә, икенсеһе гүрҙә** үлергә ваҡыт, тигән мәғәнәлә әйтелә.— *Миңә донъя малы кәрәкмәй, бер аяғым ерҙә, икенсеһе гүрҙә.* **Ер аяғы — ер башы** *ҡар.* **ер. Ике аяғын бер итеккә тыҡтырыу** ауыр хәлгә ҡуйыу. **Ике аяҡтың береһен атламау** (*йәки* **баҫмау**) бөтөнләй бармау, йөрөмәү. *Урманға ике аяғыңдың береһен атлама.* М. Тажи. **Ил аяғы һил булыу** *ҡар.* **ил** [1]. **Йылан аяғын киҫкән** *ҡар.* **йылан. Тимер аяҡ** *иҫк.* коньки. **Төклө аяғың менән** килен төшөргәндә йәки йортҡа мал ингәндә әйтелә торған теләк һүҙе. *[Гөлшәкәр:] Төклө аяғың менән, ырыҫ, бәхет алып кил, .. тип иҙәнгә аҡ кейеҙемде йәйеп, киленде түргә үткәрҙем.* И. Ғиззәтуллин. **Әҙәм** (*йәки* **кеше**) **аяғы баҫмаған** бер кем булмаған, кеше йөрөмәгән (ер, урын). *Тыуған илебеҙҙе ташлап, беҙ алыҫ далаларҙа, кеше аяғы баҫмаған тау араларында йөрөйбөҙ, донъя күрергә, тормош ҡорорға теләйбеҙ.* Ш. Шәһәр.

● *Башыңда аҡылың булмаһа, аяғыңа көс.* Мәҡәл. *Яҙа — баш осонда, ҡаза — аяҡ аҫтында.* Әйтем. *Юрғаныңа ҡарап аяғыңды һуҙ.* Әйтем.

**АЯҠ** [2] *и.* Ағас табаҡ. *Сөм аяҡ. Йәйпәк аяҡ./* Һауыт, сеүәтә.

♦ **Юл** (*йәки* **хуш**) **аяғы** кешене оҙатҡанда биргән һый.

● *Бер аяҡ ҡымыҙҙың ике аяҡлыҡ еле бар.* Әйтем.

**АЯҠ** [3] *и.* Кәлепләнгән епте үлсәү берәмеге. *Бер аяҡ йөн.* ■ *Епте, йөндө йыуыу, буяу өсөн аяҡҡа һалалар.* **Аяҡлы еп** *ҡар.* **еп** [1] 1.

**АЯҠБАУ** *и.* Ҡолон арҡанының шылтыра уыҡтан елегә тиклемге өлөшө.

**АЯҠ-ҠУЛ** *и. йыйн.* Аяҡ менән ҡул. *Аяҡ-ҡулды бәйләү.* ■ *Салауаттай ирҙәр баш эймәҫтәр, аяҡ-ҡулына бығау һалһаң да* (Халыҡ йырынан).

**АЯҠЛАНДЫРЫУ** *ҡ.* **1.** Аяҡҡа баҫтырыу, атлатыу. *Баланы аякландырыу./күсм.* Урлау, сәлдереү.

**2.** *күсм.* Кемгәлер ҡаршы ҡуҙғатыу, күтәрелдереү.

**АЯҠЛАНЫУ** *ҡ.* **1.** Башлап аяҡҡа баҫыу; атлай башлау. *Яубаҫар, аҙбар ишегенә өйөлгән көрттө көрәп, эскә инде. Ни күҙе менән күрһен— яңы ғына тыуған быҫау аяҡланырға маташа!* Р. Низамов.

**2.** *һөйл.* Берәй яҡҡа ҡарап аяҡ атлау, юл алыу. *[Әхмәҙулла:] Бәй, мин дә шул яҡҡа аяҡланырға торам бит. Әйҙә улайһа.* Ә. Вахитов./*күсм.* Урланыу, юғалыу. *Беҙҙең яландағы бесән аяҡланған бит.*

● *Шәп мал аяҡланып тыуа.* Әйтем.

**АЯҠЛАТЫУ** *ҡ. диал.* Аяҡсылау.

**АЯКЛАУ**[1] *к.* Аяк менэн тэрэн һыуҙың төбөнә етеү, буйлау (тэрэнлеген самалар өсөн). *Күлде аяклап карау түгел, унда һыу инергә лә курка инек.* З. Ураксин.

**АЯКЛАУ**[2] *к.* Сираткан епте, йөндө тубыкка, кәләпкә һалып урау.

**АЯКЛЫ** *с.* Аяғы булған, аяғы бар. *Өс аяклы өҫтәл.* ■ *Дүрт аяклы январға төйәк булған Уралым* (Кобайырҙан).

♦ **Аяклы бәлә** *кар.* **бәлә. Аяклы каза** *кар.* **каза.**

**АЯКСЫ** *и.* Һый, кунак мәжлесен алып барыусы; табынсы. *Аяксы булыу.* ■ *Аяксы күрәгәһен күтәреп ижау менән кешеләрҙе эсерә-эсерә килә.* М. Кәрим.

**АЯКСЫЛАУ** *к.* Эсемлек һалынған һауытты кор буйлап йөрөтөү. *Кырҙан барған коҙаларға, хуш аяғы тип, ҙур алдырға кымыҙ койоп, аяксылап эсерә башлайҙар.* М. Буранғолов.

**АЯКТУН** *и. диал.* Ыштан.

**АЯКҺЫРАУ** *к.* Ултырмай аяк өҫтө йөрөү, аякта булыу. *[Бибихаят:] Килгәс, ултыр, егет, торма ишек катында аякһырап.* Ә. Мирзаһитов.

**АЯКҺЫУ** *к. диал.* Аякһырау.

**АЯЛАУ** *к.* Ая менән тетеү (дебетте); ая аша үткәреү. *Кескәй Йәнеш йоклай, Тайба әбей дебет аялап ултыра ине.* З. Биишева.

**АЯН** *[ғәр.] р. иҫк.* Билдәле, сер түгел.

● *Кырмыҫканың баҫканы тәңрегә аян.* Мәкәл.

**АЯНЛАУ** *к.* Һәләт-һәләт баҫып, юрта яҙып атлау (атка карата). *Ат аянлап бара.*

**АЯНСЫЛ** *с.* Йылдам аяклы, йөрөшлө (атка карата). *Аянсыл ат.*

**АЯНЫС** *с.* Йән әсеткес; кыҙғаныс. *Аяныс яҙмыш. Аяныс тормош.*

**АЯНЫСЛЫ** *с. кар.* **аяныс.**

**АЯНЫУ** *к.* **1.** Аяу, йәлләү тойғоһо кисереү. *Балаға аяныпкарап торҙом.*

**2.** Үҙеңде-үҙең аяу. *Аяныл, ауыр эшкә бармай.*

**АЯТ** *[ғәр.] и. дини* Көрьән сүрәһенең айырым бер доғаһы. *Аят укытыу.*

**АЯУ** *к.* Йәлләү, кыҙғаныу. *Кәҙерле кунактан Сарыбай бер нәмәһен дә аямай.* «Куҙыйкүрпәс менән Маянһылыу».

**АЯУЛЫ** *с.* Йәлләү, кыҙғаныу хисе уятырлык; кәҙерле. *Атакайы кулынан бер киткәс, кем балаһы кемгә аяулы* (Халык йырынан).

● *Аяулы күҙгә сүп төшә.* Мәкәл.

**АЯУҺЫҘ** *с.* **1.** Кыҙғана белмәгән, каты бәғерле. *Аяуһыҙ кеше.*/Йәлләүһеҙ, каты. *Аяуһыҙ көрәш. Аяуһыҙ һуғыш.* // *Аяуһыҙ тотоноу. Аяуһыҙ һуғышыу.* ■ *[Бал корттары] айыуҙарҙың еҫен тойоп, аяуһыҙ сағырға тотона* (Әкиәттән).

**2.** *р. мәғ.* Саманан тыш; бик. *Аяуһыҙ күп. Аяуһыҙ ҙур.* ■ *Өҫтән шыбырлап ямғыр яуа. Елкәләрҙәге нәмәләр аяуһыҙ ауыр, юл юк.* И. Көҫәпкол./*диал.* Күп. *Аяуһыҙ йыйған еләкте.*

**АЯУҺЫҘЛАНЫУ** *к.* Аяуһыҙға әйләнеү, каты бәғерләнеү; аяуһыҙ кыланыу. *Аяуһыҙланған дошман.*

# Б

**Б** [бэ] Башкорт алфавитының икенсе хәрефе.

**БАБ** *[ғәр.] и. иҫк. кит.* **1.** Ишек; капка./*күсм.* Юл, мөмкинлек. *Бында шиғыр яҙмайынса булмай сыҙап, асылды яҙыр өсөн беҙҙәргә баб.* М. Ғафури.

**2.** Эш, тормоштоң бер йүнәлеше, бер өлкәһе. *Үҙебеҙҙең берҙән-бер углыбыҙҙы һеҙҙәрҙең хоҙур шәрифтәрегеҙгә сауҙа бабында бер микдар мәғлүмәт алдырыу өсөн ебәрҙек.* Х. Ибраһимов.

**3.** Китап, яҙманың бүлеге. *Яңынан яҙҙым тағын, иҫке калды иҫкесә, астым «Яңыртылған» бабын.* Ш. Бабич.

**4.** Рәүеш, киәфәт, һүрәт. *Был бапта. Инәйең ниндәй баптарға кермәне инде һеҙҙе үҫтерәм тип.*

**БАБА**[1] *и.* **1.** Оло йәштәге хөрмәтле ир кеше. *Октябрҙә тыуғандарҙың Ленин була бабаһы* (Халык йырынан).

**2.** Нәҫел, ырыуҙың боронғо быуыны. *Бер беҙгенә түгел, бабалар ҙа беҙҙең михнәт күреп ғүмер иткәндәр.* Х. Кунакбай. *[Һәубән — Һыуһылыуға:] Бабам Урал батырҙың Акбуҙ атын бир, һылыу!* «Акбуҙат».

**3.** *кар.* **бабай** 2.

♦ **Баба кошо** оҙон йыуан моронло, морон аҫты токсайлы эре һыу кошо; пеликан.

**БАБА**[2] *и.* **1.** Сөннәткә ултыртыусы; бабасы.

**2.** Ир балаларҙың каҫаһын кыркыу йолаһы; сөннәт. *Бабаға биреү* (ултыртыу).

**БАБАЙ** *и.* **1.** Оло йәштәге ир кеше; карт. *Бер көндө Акбулат бабай ауырып киткән дә улдарын янына сакырып алған, ти* (Әкиәттән).

**2.** Атайҙың йәки әсәйҙең ағаһы йәки уларҙан оло ир кеше./Шул кешегә өндәшеү һүҙе. *[Урал] бер картка тап булып: «Бабай, Тереһыу шишмәһенә юл кайҙа?» — тип һораны, ти.* «Урал батыр».

**3.** Өлкән йәштәге ир (катынына карата). *Бабайымдан кырк йәшемдә калдым.*

**4.** *диал.* Катындың атаһы; кайны.

♦ **Донъя бабайы** донъя көтөүгә бик әүәҫ ир. **Кыш бабай** Яңы йыл байрамында кышты кәүҙәләндергән персонаж. **Нужа бабай** ярлы, ауыр тормошка карата әйтелә.

**БАБАЙБАШ** *и. диал. кар.* **бәпембә** 1.

**БАБАЙКА** [*рус.*] *и.* Һалдың, борамдың руле; ишкәк. *Ғилман бабай .. арттағы бабайкала торған кыҙға: «Койрокто һулға һук! Уңға һук!» — тип команда бирә.* Ғ. Ғүмәр.

**БАБАЛАЙ** *и. диал.* Кәзә тәкәһе.

**БАБАСЫ** *и.* Сөннәткә ултыртыусы; баба[2].

**БАБАСЫР** [*ғәр.*] *и.* Тура эсәктәге вак кына паразит корт. *Бабасыр йоморткаһы.*

♦ **Бабасыр уты** яңғыҙ һабаклы, быуын-быуын сыккан кара-каршы куш япраклы, күк сәскәле болон үләне.

**БАБАТКЫ** *и. диал.* Битәл.

**БАББИТ** [*рус.* ⟨ *ингл.*] *и.* Ак курғаштың бакыр менән һөрмә катышкан иретмәһе (подшипникка койоу өсөн кулланыла). *Баббит заводы.*

**БАГА́Ж** [*рус.* ⟨ *фр.*] *и.* **1.** Пассажирҙың төрөп, үҙе менән юлға алған нәмәләре. *Бер әбей .. багажына ултырған да элеге бер көйөн көйләй.* Р. Солтангәрәев. / Махсус вагонда, карап һәм самолёттың махсус бүлмәһендә оҙатылған пассажир йөгө. *Нәмәләрҙе багажға һалыу. Багаж менән оҙатыу.*

**2.** *күсм.* Кемдеңдер билдәле бер өлкәләге белем һәм мәғлүмәттәре. *Экзамен кемдең күпме багажы барлығын баһалау өсөн үткәрелә.* «Совет Башҡортостаны», 1970, 22 февраль.

**БАГА́ЖНИК** [*рус.*] *и.* Велосипед, мотоцикл, автомобилдең ваҡ багажды ҡуя торған урыны.

**БАГО́Р** [*рус.*] *и.* Оҙон һаплы осло ырғаҡ. *Ҡыуғынсылар үткер багорҙар менән йыуан бүрәнәләргә батырғанса сүкей ҙә ике яклап алға табан һөйрәйҙәр.* М. Тажи.

**БАҒ** [*фарс.*] *и. шигр.* Баҡса.

**БАҒАН** *и. диал. кар.* **бағана** [1]. **Аса баған** һауыт-һаба элә торған саталы ҡаҙыҡ.

**БАҒАНА** [1] *и.* **1.** Ергә ҡаҙып ултыртылған бүрәнә. *Күпер бағанаһы. Ҡапҡа бағанаһы. Ҡойма бағанаһы. Электр бағанаһы. Бағана ултыртыу.* ■ *Маһира менән Шәйхи ҡаҙылған сокорға бағана ултыртып маташа ине.* Х. Ғиләжев.

**2.** *күсм.* Яҙыуҙың йәки һандарҙың өҫтән аҫка төшкән тар буйы. *Газета бағанаһы.*

**3.** *диал.* Ҡаҙыҡ.

◆ **Күҙле бағана** *шул уҡ* **күҙле бүкән** (*кар.* **бүкән**) **Тәре бағанаһы** шаҡ ҡатып ҡалған кешегә әрләп әйтелә. **Умыртҡа бағанаһы** *кар.* **умыртҡалыҡ.**

**БАҒАНА** [2] *и.* Бармаҡ араһына сыҡҡан шешек.

**БАҒАРА** *и. диал. кар.* **ташбаш** 1.

**БАҒАУ** *и.* Ялғаш, умарта кеүек нәмә соҡой, бүрәнә ырый торған арҡыры балта.

**БАҒАУЫЛ** *и.* **1.** Ниҙеңдер именлеген күҙәткән һаҡ; ҡарауыл. *Бағауылда тороу.*

**2.** Шул һаҡта торған кеше; һаҡсы, ҡарауыл. *Бағауыл ҡуйыу.* ■ *— Малдарыма оло көтөүсе бағауыл булды, уны мин башкаларына башлыҡ итеп ҡуйҙым. «Һуңғы һартай».*

**БАҒАУЫЛЛАТЫУ** *к. йөкм. кар.* **бағауыллау.**

**БАҒАУЫЛЛАУ** *к.* Ниҙеңдер именлеген, теүәллеген һаҡлау; ҡарауыллау. *[Бай:] Ана кура янында һарыҡтарыңды бағауыллап ят, эт-ҡош теймәһен.* Т. Хәйбуллин.

**БАҒАЯК** *и. диал. кар.* **бәпембә** 1.

**БАҒИ** [*ғәр.*] *и. иҫк. кит.* **1.** Йәберләүсе, залим.

**2.** *күсм.* Сиктән, тәртиптән сығыусы. *Бағиҙар яуы. // Бағи һүҙ.*

**БАҒЛАНЫУ** *к. төш. кар.* **бағлау.**

**БАҒЛАНЫШ** *и. югар.* Ике арала булған ҡатнашлыҡ; бәйләнеш. *С. Ҡудаш Украина әҙәбиәтенең иң күренекле вәкилдәренән Павло Тычина, Максим Рыльский һ. б. менән яҡындан танышты, ижади дуҫлыҡ бағланышын нығытты.* Ғ. Хөсәйенов.

**БАҒЛАУ** *к. югар.* **1.** Ике арала ҡатнашлыҡ, мөнәсәбәт булдырыу. *[Әхмәҙулла — Ишмәмәткә:] Беҙҙең Сәлимә насар ҡыҙ түгел .. Әгәр был яҡтан да кәрҙәшлек бағлаһаҡ, һин бөтөнләй үҙ кеше булаһың.* А. Карнай.

**2.** *күсм.* Ирекһеҙ итеү; бәйләү. *Бағлаған тәҡлид канатты ла, фекерҙе, хисте лә.* Ш. Бабич.

◆ **Ҡул бағлау** түбәнселек менән ике ҡулды ҡатландырып күкрәккә ҡуйыу. *Крәҫтиәндәрҙең баяр алдына килеп ҡул бағлап, бүрек һалып тороуы, баяр ҡатынының уларҙы тәхкирле һүҙҙәр менән һүгеп, ҡол итеп тороуҙары асыуҙы ҡабартты.* М. Ғафури. **Өмөт** (**йәки ышаныс**) **бағлау** өмөт йәки ышаныс менән ҡарау. *Хәҙер Хәбибуллинға бөтәһе лә барыбер ине. Күпме өмөт бағлап, күҙ терәп торған комбайнды Әпсәләмов ғауға күтәреп тартып алды.* Х. Ғиләжев.

**БАҒРА** *и. диал.* **1.** Баҡра.

**2.** *кар.* **бағыр** 1.

**БАҒРЫ** *и. диал. кар.* **бағыр** 1.

**БАҒЫМ** *и.* Им итеү, күрәҙәлек итеү эше. *Бағым бағыу.*

**БАҒЫМБА** *и. диал. кар.* **бәпембә** 2.

**БАҒЫМСЫ** *и.* Им итеүсе, күрәҙәлек итеүсе. *Бағымсы бабай.*

● *Бағымсыға барма, башыңа ҡайғы алма.* Әйтем.

**БАҒЫМСЫЛАУ** *к.* Им менән, күрәҙәлек менән шөғөлләнеү.

**БАҒЫМТАЛ: бағымтал мал** яҡшы ҡаралған, тәрбиә ителгән мал.

**БАҒЫНДЫРЫУ** *к.* **1.** Көс ҡулланып, баш эйҙереү; бойондороҡло итеү; буйһондороу. *[Алпамыша] теге батшаны еңеп, .. үҙенә бағындыра.* «Алпамыша». / Күнергә, яраҡлашырға мәжбүр итеү; буйһондороу. *Сәңгетеп, ялап алып барған саскау һыуыҡ бөтәһен дә үҙенә бағындырҙы.* Т. Хәйбуллин.

**2.** *күсм.* Бөтә булмышты биләү; әсир итеү. *Ҡурай моңо үҫмер малай саҡтан бағындырҙы мине үҙенә.* В. Вәлит.

**БАҒЫНЫУ** [1] *к.* **1.** Тирә-яҡҡа ҡарау; ҡараныу. *Бағынып тороу.*

**2.** *диал. кар.* **күренеү** 3. *Врачка бағыныу.*

**БАҒЫНЫУ** [2] *к.* **1.** Хөкөмгә баш һалыу, бойондороҡло булыу; буйһоноу. *Бағынған ғәскәр.* / Етәкселек аҫтында булыу; буйһоноу. *Башҡортостан ерендәге сәнәғәт эштәре төрлө органдарға бағынған.* Ғ. Ғисмәти.

**2.** *күсм.* Бөтә булмыш менән бирелеү; табыныу. *Матурлыҡҡа бағыныу. Йырға бағыныу.*

**БАҒЫР** *и.* **1.** Һыртына төрлө төҫтәге төрткө төшкән затлы балыҡ (ваҡ тау йылғаларында, саф һыуҙа була).

**2.** *диал.* Этеш.

**БАҒЫУ** [1] (баҡ*ғ*) *к.* **1.** Күҙ йүнәлтеү; ҡарау. *Алға бағыу. Тура бағыу.* ■ *Миңлегөл ике сикәһенән ҡыҫып, Буранбайҙы үҙенәрәк тартты. Сылт та итмәй уға баҡты.* Т. Килмөхәмәтов. *Ҡайҙа баҡма — унда уҡкын, унда ҡанлы кәүҙәләр.* Д. Юлтый. / Иғтибар йүнәлтеү. *Килер быуын, һиңә бағам: һеҙ бәхетле булһын өсөн ялкын йотто беҙҙең заман.* Ғ. Рамазанов.

**2.** Ҡарап тәрбиәләү. *Бала бағыу. Мал бағыу.* ■ *[Илбикә:] Үҙем бағып, үҙем буй еткергәс, үҙ ҡыҙыма үҙем хужа мин.* Х. Ғәбитов. / Көтөүҙә йөрөтөү; көтөү. *Бер аҙ барғас, ул ҡуй бағып йөрөгән бер малайға осрай* (Әкиәттән).

**3.** Күрәҙәлек итеү, им итеү. *Бағым бағыу.*

**4.** Хәл ҡылымдың *-п* формаһындағы һүҙ менән ярҙамлыҡ ҡылым сифатында килеп, эш-хәрәкәттең берәй нәмәне белеү маҡсатында башҡарылғанын аңлатҡан ҡушма ҡылым яһай. *Уҡып бағыу. Тикшереп бағыу.* ■ *Фляганы ҡайыштан ысҡындырып, һелкетеп бағам.* Н. Мусин.

♦ **Ҡыйып баҡҡыһыҙ** *шул уҡ* **ҡыйып ҡарағыһыҙ** (*ҡар.* **ҡарау**).

**БАҒЫУ** [2] (баҡ-) *ҡ. Буйһоноу, бағыныу.*

**БАҒЫУСЫ** *и.* **1.** Ҡарап, күҙәтеп, тәрбиә итеп торған кеше; ҡараусы. *Батша бөтә батырҙарҙы, бағыусыларҙы саҡыртып, ҡыҙының яңы ғына тыуған балаһын ҡарауылларға ҡушҡан* (Әкиәттән).

**2.** *ҡар.* **көтөүсе** 1.

**3.** *ҡар.* **бағымсы.** *Ҡуҙыйкүрпәстең атаһы ауырып китте, ти. Тирә-яҡтағы бөтә им-томсоларҙы, бағыусыларҙы килтереп, имләп, баҡтырып ҡараһалар ҙа береһе лә ярҙам итә алманы, ти.* «Ҡуҙыйкүрпәс менән Маянһылыу».

**БАҒЫШ** [1] *и.* Төбәлгән, арналған һүҙ, яҙыу йәки бер нәмә. *Театрҙың 20 йыллығына бағыш.*

**БАҒЫШ** [2] *и. диал.* Сағыл. *Ҡаралды ла һалдым ай ҡалҡыуға, Кишке генә буйы бағышҡа* (Халыҡ йырынан).

**БАҒЫШЛАНЫУ** *ҡ. төш. ҡар.* **бағышлау.** *Бағышланған йыр.*

**БАҒЫШЛАТЫУ** *ҡ. йөкм. ҡар.* **бағышлау.**

**БАҒЫШЛАУ** *ҡ.* **1.** Берәй нәмәне кем йәки нимәләр исеменә төбәү; арнау. *Байрамға бағышлап шиғыр яҙыу. Туғандарға бағышлап йыр йырлау.*

**2.** Кемгә йәки нимәгәләр тәғәйен итеү; арнау. *Илһам бөтә оҙон ҡышты агрономия фәндәрен өйрәнеүгә бағышланы.* С. Агиш.

**БАҒЫШЛЫ** *с.* Кем йәки нимәгәләр төбәүле. *Тарихи темаға бағышлы әҫәр.*

**БАДМИНТО́Н** [*рус.* ⟨*ингл.*] *и.* Ҡойроҡло тупты ракетка менән ҡара-ҡаршы һуғып уйнай торған уйын. *Бадминтон уйнау.*

**БАҘ** *и.* **1.** Аҙыҡ, йәшелсә һаҡлау өсөн иҙән аҫтына йәки тышҡа ҡаҙылған соҡор. *Тәрән баҙ. Картуф баҙы. Баҙ ҡаҙыу. Баҙға төшөү.* ■ *[Ғәзимә:] Баҙҙан май, вареньеларҙы алып сығып бирегеҙ.* Һ. Дәүләтшина. **Баҙ өҫтө** баҙ ауыҙындағы ҡыуыш. **Ҡар баҙы** йәйгелеккә ҡар, боҙ һалып ҡалдырылған баҙ.

**2.** Дегет ҡайнатыу, күмер yртәү кеүек эш өсөн йәтешләнгән соҡор. *Дегет баҙы. Күмер баҙы. Әүен баҙы.* **Баҙ төшәү** дегет ҡайнатҡанда, баҙ төбөнә ҡайын туҙы, тураған ҡарағай тамыры һалып сығыу. **Баҙ ягыу** дегет ҡайнатыу өсөн ергә ҡаҙып, башын ҡайыҡлап эшләнгән урын.

♦ **Баҙ күмере** *ҡар.* **күмер** 1. **Баҙ ҡаҙыу** этлек эшләү. **Баҙ өй** ергә ҡаҙып эшләнгән торлаҡ. *Бабай ике улына .. ике баҙ өй ҡаҙҙырып, башҡа сығарып ҡуйҙы, ти* (Әкиәттән).

● *Кешегә баҙ ҡаҙма — үҙең төшөрһөң.* Мәҡәл.

**БАҘАҒЫЙ** [*рус.* бодяк] *и. диал.* Һаҙ билсәне.

**БАҘАМ** [*фарс.*] *и.* **1.** Гөлйемештәр ғаиләһенә ҡараған алһыу сәскәле, сәтләүек һымаҡ емешле көньяҡ ағасы.

**2.** Шул ағас емешенең әскелтем орлоғо. *Баҙамлы күмәс.*

**БАҘАНЫУ** *ҡ.* **1.** *ҡайт. ҡар.* **баҙау** [1]. *Баҙаныр ҡалыу. Һөтһөҙ баҙаныр бөттөк. Ауыр эшкә баҙаныу.*

**2.** *диал.* Киҙәнеү. *Тауыш сыҡты. ..Тимошка Кацелгә баҙана башлағас, сигенеп барғанда артына йығылып китте.* Ж. Кейекбаев.

**БАҘАР** [*фарс.*] *и.* **1.** Күмәк кешенең үҙе эшләп йәки етештереп алып килгән нәмә (күберәк аҙыҡ) менән һатыу иткән шәхси сауҙаһы. *Оло баҙар. Баҙар хаҡы. Иген баҙары. Мал баҙары. Баҙар көнө. Баҙарға барыу. Баҙар асылыу. Баҙар таралыу.* / Шул сауҙа үткәрелгән махсус урын. *Баҙарҙа халыҡ мыжғып тора, алыусылары ла, һатыусылары ла шау килеп һөйләшә, ҡул һуғыша, хаҡ бесә.* Ғ. Дәүләтшин. / *күсм.* Геүләп торған шау-шыу, ығы-зығы. *Баҙар ҡороу.*

**2.** Ваҡыты-ваҡыты менән халыҡ алдына сығарып ойошторолған махсус сауҙа. *Китап баҙары. Мәктәп баҙары.*

**3.** *эк.* Тауар әйләнеше өлкәһе. *Донъя баҙары. Тышҡы баҙар. Эске баҙар.*

**4.** Нәмәнең ирекле һатыу хаҡы. *Баҙары күтәрелеү. Баҙары төшөү.* ■ *Оҫоҙ хаҡҡа сиртмәмме икән, тип ул [Миңъян] шул малдарҙы аулап йөрөнө. Юҡ, Сәлмән дә белмәй түгелдер шул, күтәренке ҡуйған баҙарын.* Ғ. Сәләм.

**5.** *күсм.* Халыҡ алдындағы баһа, дәрәжә. *Сарбай үҙенең баҙарын яҡшы аңлай. Шунлыҡтан ҡайһы бер ваҡыт ялындырып та ҡуя. Һалдат уның ҡурай уйнағанын үтенеп һорай.* Ш. Насыров. *Ауылда Рәшиҙә әбейҙең баҙары бик ҙур.. Уны яраталар, уға киләләр.* К. Мәргән.

♦ **Ҡош баҙары** диңгеҙ яр буйҙарындағы күсәр ҡоштар тупланған ер. **Төнәй** (*йәки* **әүен**) **баҙарына китеү** йоҡоға китеү, йоҡлап китеү. *Айбулат әсәһенең йырын тыңлағандай итеп бер аҙ ятҡас, әүен баҙарына китеп тә барҙы.* Т. Килмөхәмәтов.

● *Балалы өй — баҙар, балаһыҙ өй — маҙар.* Мәҡәл.

**БАҘАРҠАН** [*фарс.*] *и. ҡар.* **баҙарсы.** *Шәрек баҙарҡандары.*

**БАҘАРЛАУ** *ҡ.* Баҙарға барыу.

**БАҘАРЛЫҠ** *и.* **1.** Баҙарҙан алып ҡайтҡан күстәнәс.— *Әйе шул, Үмәр ҡайнаға ла баҙарҙан ҡайтып төшһә, баҙарлыҡ менән сәй эсербеҙ.* Һ. Дәүләтшина.

**2.** *диал. ҡар.* **баһа** [1] 1.

**БАҘАРСЫ** *и.* Баҙарға барған кеше. *Ҡултығына төрлө нәмә ҡыҫтырған баҙарсылар күренеп ҡала.* К. Мәргән. / Баҙарға йөрөргә яратҡан кеше. *Ғариф ағай баҙарсы түгел.. Йылына бер-ике барһа бара, баҙар тип иҫе китмәй.* Б. Бикбай.

**БАҘАТЫУ** *ҡ. йөкм. ҡар.* **баҙау** [1].

**БАҘАУ** [1] *ҡ.* **1.** Уңайһыҙлыҡ тойоу; ҡаушау. *Марина йәшен арттырып әйтмәксе булғайны ла ярты һүҙендә баҙап ҡалды.* М. Хәйҙәров.

**2.** Көс, хәлдән яҙыу; арыу, йонсоу. *Рәзиләнең аяҡтары нык баҙаған, күрәһең, атламай ҙа ҡуя.* Н. Мусин.

**БАҘАУ** [2] *ҡ. диал.* Ырыу.

**БАҘАУ**[3] *с. һир.* **1.** Ҡапыл уңайһыҙланып, ҡаушап барыусан; оялсан. *Баҙау кеше.*

**2.** Арыған, йонсоу төҫлө; йонсоу.

**БАҘҘАУ** *к. кар.* **яныу**[1] 2. *Үлән сәйен баҫырып ҡуйһаң, баҙҙай. Баҙҙап, ҡыҙып, ҡап-ҡара була.*

**БАҘЛАТЫУ** *к.* **1.** Ялҡынһыҙ ут итеп яндырыу. *Ҡуҙҙы баҙлатыу.* / *күсм.* Янған кеүек итеү. *Күҙҙе баҙлатыу.*

**2.** Йылҡылдатыу, ялтылдатыу.

**БАҘЛАУ**[1] *к.* **1.** Ялҡынһыҙ ут булып яныу. *Баҙлап торған ҡуҙ.* ■ *Ҡуҡтә, ынйы бөртөктәре кеүек, йондоҙҙар баҙлай.* Ж. Кейекбаев. / *күсм.* Янған һымаҡ булыу. *[Әткол] күҙҙәре баҙлап ултырған түрәләрҙе асыулы бер ҡараш менән һөҙөп алды.* Ғ. Дәүләтшин.

**2.** Сағылйып йымылдау; йылҡылдау. *Инде атаһы алып ҡайтҡан матур баҙлап торған сатин күлдәкте тегергә кәрәк ине.* Һ. Дәүләтшина. *Һауалар саф, күк йөҙҙәре алһыу аҡ ҡына. Шуға баҙлап тора, ахыры, роза һәм ҡына.* К. Кинйәбулатова.

**БАҘЛАУ**[2] *к. диал.* Баҙ ҡаҙып күмеү. *Амбарҙарға иген бушаталар, һыймағанын ергә баҙлайҙар ине.* И. Көҫәпҡол.

**БАҘЛАУЫҠ** *и.* **1.** Ҡараңғыла яҡтыртып торған ағас сөрөгө.

**2.** *кар.* **быҙлауыҡ.**

**БАҘЛАШЫУ** *к. урт. кар.* **баҙлау**[1] 1. *Баҙлашып торған электр шәмдәре.*

**БАҘМАНСЫЛЫҠ** *и. диал. кар.* **ҡыйыулыҡ**[2]. *Окопҡа нисек сығырға? Беҙҙең план икенсе төрлө: йә төнгә тиклем шунда ҡалырға, йә бөтә баҙмансылыҡҡа барып, окопҡа табан шыуырға.* Д. Юлтый.

**БАҘНАТ** *и.* Кеше ҡаршыһындағы ҡыйыулыҡ; батырсылыҡ. *Баҙнат етмәү.* ■ *Хан ҡыҙына баҙнатым юҡ, буҙ толпары миңә булһасы.* «Алпамыша».

□ **Баҙнат итеү** ҡыйыуланыу; батырсылыҡ итеү. *Ямал күлдәгенең ни өсөн йыртылғанын әйтергә баҙнат итә алмай торғанда, Тәнзилә әбей ярҙамға килде.* М. Тажи.

**БАҘНАТЛАНЫУ** *к.* Ҡыйыуланыу.

**БАҘНАТЛЫҠ** *и. кар.* **баҙнат.** *[Йәмилә] ҡурҡа-ҡурҡа барып, аш бешерә торған бүлмәнең алдына туҡтаны, керергә баҙнатлыҡ һәм батырсылыҡ итә алмай торҙо.* М. Ғафури.

**БАҘНАТСЫЛЫҠ** *и.* Кеше ҡаршыһындағы ҡыйыулыҡ; батырсылыҡ, баҙнат. *Йыйылышта сығып һөйләргә баҙнатсылыҡ етмәй.*

□ **Баҙнатсылыҡ итеү** ҡыйыуланыу; батырсылыҡ итеү. *Һүҙ әйтергә баҙнатсылыҡ итә алмай тороу.*

**БАҘНАТҺЫҘ** *с.* Кеше ҡаршыһында ҡыйыуһыҙ. *Баҙнатһыҙ кеше.*

**БАҘРАЙЫУ** *к.* Эре-эре, тос булып, яҡтыға сағылйыу. *Аҡназарҙың... буралырында баҙрайып ятҡан арыштар урынына асыҡҡан сыскандар ғына хөкөм һөрә ине.* Ғ. Дәүләтшин.

**БАҘРАЙЫШЫУ** *к. урт. кар.* **баҙрайыу.** *Баҙрайышып ятыу.*

**БАҘРАУ** *к.* **1.** Ныҡ баҙлап, өйөлөшөп яныу (ҡуҙға ҡарата). *Баҙрап тороу. Баҙрап ятҡан ҡуҙ.*

**2.** *кар.* **баҙрайыу.**

**БАҘЫҒАЙТЫУ** *к.* Баҙыҡҡа әйләндереү; баҙыҡ итеү.

**БАҘЫҒАЙЫУ** *к.* Баҙыҡҡа әйләнеү, баҙыҡ булыу.

**БАҘЫҠ**[1] *с.* **1.** Тулы көскә эйә; ныҡ, елле. *Баҙыҡ бағана. Баҙыҡ имән. Баҙыҡ таш. Баҙыҡ теш.* ■ *[Ғариф] өй башына менеп, .. иҫке булһа ла, әле баҙыҡ ҡына тимерле бер ыңғырсаҡ тапты.* Б. Бикбай.

**2.** Йыуантыҡ, ныҡлы, көслө. *Баҙыҡ кәүҙәле. Баҙыҡ бала. Баҙыҡ ҡул. Баҙыҡ булыу.*

**3.** Ышаныслы, ныҡлы, көслө. *Баҙыҡ аҙым. Баҙыҡ хәрәкәт. Эшкә баҙыҡ.* // *Баҙыҡ атлау. Баҙыҡ һөйләшеү.* ■ *Йыр, бейеүгә һөнәрле ҡыҙ, көрәшкә баҙыҡ егет.* С. Кулибай.

**БАҘЫҠ**[2] *с.* **1.** Бик ныҡ, сағыу. *Баҙыҡ йондоҙ. Баҙыҡ күлдәк.* ■ *Ал ҡояштың баҙыҡ нурҙары еҙ батмуста сағылып уйнаны.* М. Тажи.

**2.** *күсм.* Асыҡлығы, аңлайышлылығы, ышандырыу көүәһе һ. б. менән ныҡ тәьҫир яһаған. *[Артистканың] һоҡланғыс ижады, сәхнәлә тыуҙырған образдары сағыу һәм баҙыҡ.* «Совет Башҡортостаны», 1986, 17 ғинуар.

**БАҘЫҠЛАНДЫРЫУ**[1] *к.* Баҙыҡ, ныҡлы итеү. *Колхоз тормошо ла кешеләрҙең күңелен таҙарта, баҙыҡландыра, матурлай.* Б. Бикбай.

**БАҘЫҠЛАНДЫРЫУ**[2] *к.* Бик сағыу, асыҡҡа әйләндереү.

**БАҘЫҠЛАНЫУ**[1] *к.* Баҙыҡҡа, көслөгә әйләнеү; баҙыҡ булыу. *Уҡыусылар ҡояшҡа ҡарайып, эштә сынығып, баҙыҡланып киткән.* Б. Ноғоманов.

**БАҘЫҠЛАНЫУ**[2] *к.* Бик асыҡ, сағыуға әйләнеү. *[Зәлифә гөлгә] һалҡын һыу бөркөп ебәрә торғайны. Гөл йәнә баҙыҡланып, балҡып киткәндәй була.* З. Ураҡсин.

**БАҘЫЛДАУ** *к. кар.* **баҙлау**[1] 1.

**БАҘЫМ**[1] *и. диал.* Баҙиат.

**БАҘЫМ**[2] *и. диал.* Ырылған ер.

**БАҘЫРЛАУ** *к.* Ныҡ баҙлап яныу. *Баҙырлап ятҡан ҡуҙ.* ■ *Ҡуҡтә яҡут йондоҙҙар баҙырлап янып торған яҙғы төн ине.* «Башҡортостан ҡыҙы» 1969, № 1.

**БАҘЫУ** *к.* Баҙиат итеү, батырсылыҡ итеү. *Был хаҡта ул [Вадим бабай] һөйләй алмай, һорағанды ла яратмай. Мин дә уның яҙмышын башҡа кешеләрҙән генә ишеттем, үҙенән баҙып һораманым.* С. Кулибай. *Ҡыҙҙың эргәһенә барып һүҙ ҡушырға баҙманым.* Н. Мусин.

**БАҘЫЯ** *[фарс.] и.* Ҡалын тимерҙән йәки таҡтанан эшләнгән ҙур күнәк.

**БАҘЫЯН** *и.* **1.** Йыла япраҡлы, һарғылт сәскәле мәңге йәшел көньяҡ ағасы. *Баҫмаҫ та ғына инем баҫҡысыңа, баҫҡыстарың баҙыян ағасы* (Халыҡ йырынан). *Һәр төрлө лә ағас күп булыр, баҙыяндай ағас була алмаҫ* (Халыҡ йырынан). / *с. мәғ.* Эре биҙәк төшөрөп, шул ағастан эшләнгән. *Баҙыян ҡалаҡ. Баҙыян сеүәтә.* ■ *Хужа кеше .. ҡымыҙҙы сөм ағас ижау менән болғата ла, баҙыян тәгәстәргә ҡойоп сыға.* Ғ. Хөсәйенов.

**2.** Шул ағастың еҫле май бирә торған емеше. *Баҙыян майы.* ■ *Йөрәгемдең яныуына һибәм баҙыян майҙары* (Халыҡ йырынан). *Ҡәләмфер*

*ҙә сәйнәп, бөрктөм баҙыян Шәүрә килен кейгән еләнгә* (Халыҡ йырынан).

♦ **Баҙыян үләне** (*йәки* **сәскәһе**) йыла япраҡлы, оҙон төҙ һабаҡлы, ал йә алһыу күк сәскәле күп йыллыҡ еҫле үлән (дауаға ҡулланыла).

**БАЖА** *и.* Апалы-һеңлеле ҡатындарҙың ирҙәре (бер-береһенә ҡарата). *Айһылыу менән Таңһылыу бер тугандар... Ә уларҙың ирҙәре, Сөләймән менән Хәйретдин, бажалар була.* Ғ. Байбурин.

**БАЖАТ** *и.* Ҡыяҡ япраҡлы, һоло башлы, оҙон тамырлы малға бик туҡлыҡлы үлән.

**БАЖҠ** *окш.* Өйрәк тауышын белдергән өүҙ; быжҡ. *Бажк итеү.*

**БАЖҠ-БАЖҠ** *окш.* Ҡабат-ҡабат бажҡ иткәнде белдергән һүҙ. *Бажк-бажк итеү. Бажк-бажк килеү.* ■ *Бажк-бажк-бажк итә кул эсендә өйрәктәр.* Т. Йәнәби.

**БАЖҠЫЛДАУ** *к.* Бажк-бажк итеү, бажҡ-бажҡ килеү. *Бажкылдыгы сыгыу.* ■ *Яңгыҙ кыр өйрәге бажкылдап осоп китте.* Б. Бикбай.

**БАЖЫМ** *и.* Солоҡтоң ауыҙы. *Солоктоң бажымын капкас менән ябып куялар.* **Бажым алыу** солоҡҡа ауыҙ яһау; бажымлау.

**БАЖЫМЛАУ** *к.* Солоҡҡа ауыҙ яһау; бажым алыу.

**БА́ЗА** [*рус.* ⟨ *фр.*] *и.* **1.** Нимәгәлер шарт, мөмкинлек биргән таяныс; нигеҙ. *Экономик база. Техник база. Аҙык базаһы. Сырье базаһы.* ■ *Һуңгы йылдарҙа мәктәптәрҙең материаль базаһы ныгыны.* «Совет Башҡортостаны», 1965, 15 май.

**2.** Ниҙе лә булһа хеҙмәтләндереү өсөн булған запас һәм махсус ҡоролмалар тупланған урын. *Геологик экспедиция базаһы. Туристик база.* / Илдең ҡораллы көстәренең үҙ йәки сит территорияһындағы терәк пункты. *Авиация базаһы. Хәрби-диңгеҙ базаһы.* / Төрлө тәьминәт кәрәге һаҡланған урын. *Аҙык-түлек базаһы. Ягыулык базаһы.*

**БАЗА́ЛЬТ** [*рус.* ⟨ *лат.*] *и.* Көрән төҫтәге вулканик тау тоҡомо.

**БА́ЗИС** [*рус.* ⟨ *гр.*] *и.* Йәмғиәттең экономик ҡоролошо; билдәле бер йәмғиәттең үҙенә ярашлы политик, хоҡуҡи, әхләҡи һ. б. ҡанундары булған етештереү мөнәсәбәттәре.

**БАЙ**[1] I *с.* **1.** Мал-мөлкәте күп; мул, етеш; киреһе ярлы. *Бай кеше. Бай ил. Бай колхоз. Бай йорт. Донъяһы бай.* // *[Гөлнур:] Бындагы халыктың күпселеге рус, улар борон-борондан бик бай йәшәгән.* М. Тажи.

**2.** Юғары дәрәжәлә етерлек; мул. *Бай тәбигәт. Бай тәжрибә. Халык телгә бай. Бай эстәлекле әҫәр.* ■ *Беҙҙә иҫ китерлек бай фольклор материалы бар.* Ғ. Амантай.

**3.** Иркен, ҡуйы булып үҫкән. *Бай тирәк. Бай сауыл. Бай һакал.*

II *и.* **1.** Кеше көсөнән файҙаланып, мал-мөлкәт йыйып йәшәгән синфи ҡатлам кешеһе. *[Януҙак карт:] Ай-һай байҙар батракты эшләтә белде. Ете кат тирең сыкканса, һуңгы тамсы каныңды һыкканса эштән туктатыу юк ине.* М. Тажи. **Ҡара бай** һаран бай. **Серегән бай** бик ныҡ байыған бай.

**2.** Кешегә (күберәк юғары ҡатлам кешеһенә) хөрмәт менән өндәшеү һүҙе. *Әхмәт бай. Таһир бай.* **Бай ағай** байҙарға, өлкәндәргә ололап өндәшә торған һүҙ. *Һунарсы көс-хәл менән генә башын күтәреп әйткән: «Аксам юк шул, бай агай»* (Әкиәттән).

**3.** Ҡатындың ире.

♦ **Бай һөйәк** өлөш һөйәге. *Бай һөйәк өләшеү.* **Бай һүҙе** ҡыҙ атаһының яусыға әйткән һуңғы һүҙе. *[Яусы — Үмәргә:] Ҡыҙың еткән. Алла сәстәрен бәйләгән булһа, бай һүҙенде ишетәйек.* Һ. Дәүләтшина.

● *Иртә торган бай булган, һуңлап торган хур булган* (Әйтем).

**БАЙ**[2] *и.* **1.** Ниндәйҙер эш-хеҙмәтте, хаҡты ҡайтарырлыҡ нәмә; бәрәбәр. *Эшләгән байын түләү.* ■ *Мине ас-ялангас итмәйем тип күпме яфа сиккән әсәйем. Шуның байына хәҙер уны тәрбиәләйһе кешемен бит мин.* Н. Мусин.

**2.** Ниҙелер үлсәгәндә, һуңынан кәмеү иҫәбенә артығыраҡ итеп ҡалдырылған өлөш. *Кейем бескәндә тегеү байы калдырыла.*

♦ **Алдың байыңа** (*йәки* **байыңды**) ниҙендер аҙағы насар булып бөткәндә әйтелә. *Старшина атлы казактарын килтереп бешә башлаһа — алдың байыңды.* Б. Бикбай. **Байына алыу** насар һөҙөмтә күреү; кәрәгенә алыу. *Күп котора ине, байына алды.* **Байын биреү** 1) ниҙелер туйғанса эшләп кәрәген биреү. *Ашауҙың байын биреү. Йоконоң байын биреү. Уйнауҙың байын биреү*; 2) кинәнеп әрләү йәки туҡмау; эшен килтереү. **Байын ҡайтарыу** хаҡын, ҡоһорон ҡайтарыу. *Шатморат бейеүҙән туктап: «Кунак булыуҙың байын кайтарырга тырыштым инде»,— тип йылмайҙы.* Д. Исламов. **Көҙ байында** көҙ мәлендә, көҙгөһөн.

**БАЙБАҠ** *и. кар.* **һыуыр.**

**БАЙ-БЕТСӘ** [*фарс.*] *и.* **1.** Бай улы.

**2.** Байҙар ҡатламы; байғура. *Һалдат итеп алдылар, өҫкә шинель һалдылар, бай-бетсәнең малайҙары өйҙә тороп калдылар* (Бәйеттән).

**БАЙБИКӘ** *и.* **1.** *иҫк.* Бай ҡатыны; байбисә.

**2.** (*баш хәреф менән*) Ҡатын-ҡыҙ исеме.

**БАЙБИСӘ** *и. һөйл.* Бай ҡатыны; байбикә. *[Тәңкәбикә:] Минең исемемде шул бер Диуананан башка кеше әйтмәй. Илмырҙа бей үлгәндән бире байбисә тип кенә йөрөтәләр.* М. Кәрим.

**БАЙҒОШ** *и.* **1.** Өкөнөң бер төрө.

**2.** *кусм.* Ҡыҙғаныс, меҫкен хәлдәге кеше. *Бер кем дә түгел мин: йорт-ерһеҙ, өйһөҙ, эшһеҙ, кейемһеҙ байгош!* Ғ. Ғүмәр. *[Көнһылыуҙың] кейәүе ауыҙынан һүҙ сыкмаҫ, кулынан эш килмәҫ,.. үҙ куләгәһенән куркыр бер байгош була.* М. Буранғол. / Кешегә кәмһетеп, мыҫҡыллап әйтелә. *[Ғәйшә:] Улар якшылыкка өйрәтә тейһеңдер инде, байгош.* Һ. Дәүләтшина.

● *Байгоштоң ояһын хоҙай кора.* Мәҡәл.

**БАЙҒОШЛАНЫУ** *к.* Үҙеңде ҡыҙғаныс итеп күрһәтеү; меҫкенләнеү.

**БАЙҒУРА** *и. иҫк.* Байҙар ҡатламы. *Байгуралар, лавкасылар былай ҙа йөҙәгән халыктың канын имеп, кеҫәләрен калынайтты.* С. Агиш.

**БАЙДА́РКА** [*рус.*] *и.* Ике башы ла ҡалаҡлы бер ишкәк менән йөрөтөлә торған ябыҡ өҫлө еңел спорт кәмәһе.

**БА́ЙКА** [*рус.* ⟨*гол.*] *и.* Мамыкланып торған йомшаҡ туҡыма. // *Байка кулдәк.*

**БАЙКАЛЫУ** *к. төш.* **байкау** 1.

**БАЙКАУ** *к.* **1.** Тикшереп, күҙҙән үткәреү; күҙ йөрөтөү. *Ян-яҡты байкау.* ■ *Илде шунан байкап торғом килә, ләкин унда ҡоро таш ҡына.* Д. Юлтый.

**2.** *диал. ҡар.* **абайлау** 3. *Мин, бала кеше, уны-быны байкамағас ни, [тәңкәне] алдым да түшемә таҡтым.* Һ. Дәүләтшина.

**БАЙКЫ** *и.* Һыуын ҡәбиләһенә ингән бер башҡорт ырыуы.

**БАЙЛАР** *и.* Бер башҡорт ырыуының исеме.

**БАЙЛЫҠ** *и.* **1.** Ҡулдағы мал-мөлкәт; дәүләт. *Байлыҡ йыйыу. Байлыҡ ҡуныу.* ■ *Уңлы-һуллы юлдар менән ҙур байлыҡҡа ирешеп, шәп итеп йәшәп ятҡанда, теге ваҡытта ташлап киткән баҙ өйө Ирйегеттең иҫенә төшкән.* З. Биишева. / Йорт, ҡуралағы йыһаз, ҡаралды. *Этколдоң өйө матурлығы, байлығы менән ауылдағы башҡа өйҙәрҙән ала булаҡ булып әллә ҡайҙан айырылып тора.* Һ. Дәүләтшина.

**2.** Материаль яҡтан ҡиммәтле нәмәләр йыйыңмы. *Тәбиғәт байлыҡтары. Руда байлыҡтары.*

**3.** Ниҙеңдер күп төрлөлөгө, бик күплеге. *Фекер байлығы. Һүҙ байлығы.*

♦ **Көҙгө байлыҡта** көҙгө етеш ваҡытта. *Көҙгө байлыҡта бер аҙ көрәйеп ҡалған халыҡ ҡабат асыға башланы.* Ф. Иҫәнғолов.

● *Байлыҡ күрке мал менән, батыр күрке дан менән.* Әйтем. *Ҡыҙ байлығы — күркәм холоҡ, ир байлығы — тәүәккәл.* Мәҡәл.

**БАЙМАБАШ** *с. диал.* Башбаштаҡ.

**БАЙМАН** *и. иҫк.* **1.** Тормоштағы ҡәнәғәтлек, тыныслыҡ, именлек. *Байман табыу.*

**2.** *с. мәг.* Ҡәнәғәт, тыныс. имен. *Байман донъя.* //*Байман ятҡан ил.* ■ *[Урал:] Кешегә ярҙам итермен, илемде байман итермен.* «Урал батыр».

**БАЙМАНЛЫҠ** *и. иҫк.* Тыныс, имен тормош; тыныслыҡ. *Заятүләк .. бер мохтажһыҙ байманлыҡта йәшәүенә ҡарамаҫтан, тыуған ерен, ер тормошон һағына башлай.* «Заятүләк менән Һыуһылыу».

**БАЙПАҠ** *и.* Ҡата эсенән кейә торған кейеҙ ойоҡ.

♦ **Байпаҡлы итек** ҡаталап эшләнгән кейеҙ итек.

**БАЙПАН-БАЙПАН** *окш.* Аяҡ баҫҡан һайын ауыр итеп ян-яҡҡа сайҡалғанды белдергән һүҙ. *Байпан-байпан атлау. Байпан-байпан итеү. Байпан-байпан килеү.* ■ *Бер йәш сабый йөрөй өй эсендә байпан-байпан баҫып аяғын.* Х. Ғәбитов.

**БАЙПАНЛАУ** *к.* Байпан-байпан итеү, байпан-байпан килеү. *Һимеҙ өйрәк кеүек байпанлап йөрөгән оло бисә Рәхимә повозканан көскә шыуып төштө.* Һ. Дәүләтшина.

**БАЙРАҠ** *и.* **1.** Һапҡа тағылған үҙенә бер төҫтәге киң туҡыма рәүешендәге рәсми билдә (дәүләт, ғәскәр йәки бер ойошмаға ҡарай). *Дәүләт байрағы. Полк байрағы. Спорт йәмғиәте байрағы.* ■ *Ҡыҙыл байраҡ, ҡыҙыл ялҡын төҫлө, талғын өргән елгә елберләй.* Т. Йәнәби.

**2.** *күсм.* Төркөм, ойошма йәки хәрәкәттең йүнәлешен билдәләгән төп идея. *Тыныс йоҡла, Ленин бабай, һәр бер һүҙең үтәлә. Бөтә донъя эшсе халҡы байрағында күтәрә* (Халыҡ йырынан).

**БАЙРАМ** *и.* **1.** Йәмғиәт әһәмиәтендәге бер ваҡиғаға бағышланған тантана көнө. *Еңеү байрамы. Май байрамы. Октябрь байрамы.* ■ *Һәр ауылдың да була киң ат сабыш майҙандары. Йәшәһен беҙҙең халыҡтың милли был байрамдары!* Ш. Бабич. / Дини яҡтан билдәләнгән махсус көн. *Ҡорбан байрамы. Ураҙа байрамы.*

**2.** Йәмғиәттең йәки айырым бер кешенең тормошондағы ҡыуанысле ваҡиға уңайы менән ойошторолған һый һәм уйын-көлкө. *Байрам яһау.*

**3.** Матур, ҡыуаныслы бер нәмәгә бағышлап үткәрелгән махсус көн. *Йыр байрамы. Сәскә байрамы.*

□ **Байрам итеү** иҫтәлекле ваҡиғаға бағышлап тантана яһау. *Булар хандың ҡыҙы донъяға килә. Ул байрам итә, бөтә халыҡты йыйып, һыйлап ташлай* (Әкиәттән).

♦ **Бары менән байрам** булғаны менән ҡәнәғәт икәнде белдергәндә әйтелә. **Иртәгә байрам түгел** эшкә, һүҙгә әүрәп бик төнләп киткәндә, йоҡларға өндәп әйтелә. *[Мәғфүрә:] Әйҙәгеҙ, булмаһа, йоҡлайыҡ, иртәгә байрам түгел бит.* Һ. Дәүләтшина. **Көн дә байрам көн дә туй** эшһеҙ, хәстәрһеҙ йөрөгән кешегә ҡарата әйтелә.

● *Иркә бала байрамы — яңы күлдәк кейгәндә, йәтим бала байрамы — ауыҙы ашҡа тейгәндә.* Әйтем. *Ялҡауға көн дә байрам.* Әйтем.

**БАЙРАМСЫЛАУ** *к.* Байрам ашы ашау һәм күстәнәс йыйыу өсөн өйҙән өйгә йөрөү (бала-сағаға ҡарата).

**БАЙРАУ** *к.* **1.** Бурлат ҡыҙыл төҫкә инеү; тонйорау (ҡояшҡа ҡарата). *Көн байрап ҡуныр барғанда былар ҙа [көтөүселәр] саңлауға етте.* «Ҡуҙыйкүрпәс менән Маянһылыу».

**2.** Ялтыр төҫтә булыу; ялтырау. *Зәйнәп туташ ҡара сәсен майлап тора,.. сәс бөртөктәр тулҡынланып байрап тора.* Ш. Бабич.

**БАЙСА** *и. иҫк.* Боронғо Сыңғыҙ дәүләтендә ҙур дәрәжә билдәһе итеп бирелгән тамға.

● *Эт муйынына алтын байса таҡһаң да тиҙәк ейеүен ҡуймаҫ.* Мәҡәл.

**БАЙТАҠ** **1.** *р.* Һаны, күләме ғәҙәттәгенән күп, арыу уҡ күп, күп кенә. *Байтаҡ барғас, улар [Сәгиҙәләр] бер шишмәгә килеп сыҡты.* М. Тажи. *Мин булмәлә яңғыҙым байтаҡ ултырҙым* Д. Юлтый.

**2.** *с.* Һаны, күләме күп. *Байтаҡ кеше. Байтаҡ юл үтеү.— Дим буйында башҡа хан булмаған, бындағы ишле халыҡтың байтағы Урал буйына таралып ултырған, ти* (Әкиәттән).

**БАЙТАЛ** *и.* **1.** Тай йәшенә сыҡҡандан тәүҙ ҡолонлағанға тиклемге бейә малы. *Дүнәжен байтал. Ҡонан байтал. Тай байтал.— Ҡырҙа талдан тал үҫә, тайҙан матур байтал үҫә.* Ш. Бабич.

**2.** *диал.* Тыу [3] бейә.

**БАЙТУС** *и.* Уйындағы көтөүсе. *Байтус булыу.*

**БАЙУЛЫ** *и.* Бөрйән ҡәбиләһенә ингән бер башҡорт ырыуының исеме.

**БАЙЫҒЫЛЫУ** *к. эйһ. ф. ҡар.* **байығыу.** — *Байығылһа, үҙеңә кейәү ҙә булып ҡуйырмын.* Я. Хамматов.

**БАЙЫҒЫУ** (байыҡ*ғ*) *к.* Байға әйләнеү; байыу. *Социалистик милекте байыгыу һәм комһозлоҡ максатында файҙаланырга бер кемдең дә хакы юк.* Башҡорт АССР-ының Конституцияһы, 1984. *Урал тауҙың буйында фәкир ҙә бар, бай ҙа бар, байыгам тип тир түккән бахыр ҙа бар* (Ҡобайырҙан).

**БАЙЫҠТЫРЫЛЫУ** *к. төш. кар.* **байыҡтырыу.**

**БАЙЫҠТЫРЫУ** *к.* **1.** Бер нәмәне кәрәкле матдә менән тулыландырыу; байытыу. *Аҙыкты витаминга байыктырыу. Руданы байыктырыу. Тупракты азотка байыктырыу.*

**2.** Бер нәмәне состав һәм эстәлек йәһәтенән тулыландырыу, төрләндереү. *Белемде байыктырыу. Тәжрибәне байыктырыу.*

**3.** *кар.* **байытыу** 1.

**БАЙЫМБАҠ** *и. диал. кар.* **бәпембә** 1.

**БАЙЫРСА** *и.* Бот, ҡул һөйәктәренең мускулдарҙы беркетеп тотоу өсөн хеҙмәт иткән йәки һөйәктәрҙең быуынтыҡтары составына ингән тупалсаҡ башы.

**БАЙЫТЫЛЫУ** *к. төш. кар.* **байытыу** 2, 3.

**БАЙЫТЫУ** *к.* **1.** Байға әйләндереү, бай итеү; байыҡтырыу. *[Миңлебай:] Ҡуйсәле, әсәй,.. күргән бер төшөң раҫ була торган булһа, беҙҙе күптән байытып, серетеп бөткән булыр инең инде.* Т. Йәнәби.

**2.** Бер нәмәне кәрәкле матдә менән тулыландырыу, байыҡтырыу. *Тупракты ашламага байытыу.* ■ *Мал аҙыгын консервирларга, химик матдәләр менән байытырга кәрәк.* «Совет Башҡортостаны», 1965, 23 май.

**3.** Бер нәмәне состав һәм эстәлек йәһәтенән тулыландырыу; байыҡтырыу. *Декорация ла музыкаль һәм хореографик күренештәр ҙә спектаклде байыта.* «Совет Башҡортостаны», 1965, 21 август.

**БАЙЫУ** [1] *к.* **1.** Күп мал-мөлкәткә эйә булыу, байға әйләнеү. *Бара-тора Ирйегет үҙе лә байып, карап хужаһы булып алган.* З. Биишева.

**2.** Состав һәм эстәлек йәһәтенән тулыланыу. *Белемгә байыу.* ■ *[Айбулат:] Аксага булмаһа, акылга байып ҡайттым.* һ. Дәүләтшина.

**БАЙЫУ** [2] *к.* Офоҡ артына төшөү (күк есемдәренә ҡарата); батыу. *Ҡояш байыны. Сулпан йондоҙ байыны.* ■ *Ай байыны, таң атты.* М. Ғафури.

**БАЙЫШ: ҡояш** (*йәки* **көн**) **байышы** ҡояш байыған тараф.

**БАК** [*рус.* ⟨ *фр.*] *и.* Шыйыҡ нәмә ҡойоп ҡуя торған ҙур һауыт. *Һыу багы. Нефть багы. Бензин багы.*

**БАКАЛЕ́Я** [*рус.* ⟨ *гәр.*] *и.* Сәй, шәкәр, он, ярма кеүек аҙыҡ-түлек. *Бакалея магазины.*

**БАКАУЫШ** [*рус.* упаковочный] *и. диал.* Ишкән бау; бәй. *Бакауыш ишеү.*

**БА́КЕН** [*рус.* ⟨ *гол.*] *и.* Йылғала, күлдә һ.б. фарватерҙы һәм ҡурҡыныс урынды билдәләү өсөн якорға ҡуйылған ҡалҡыуыслы билге. *Кискеһен Байым кәмә менән йөрөп, бакен токандыра, ә Ғиндулла бабай уны яр башынан карап тора.* З. Хисмәтуллин.

**БА́КЕНЩИК** [*рус.*] *и.* Бакен ҡарауылсыһы.

**БАКЛАЖА́Н** [*рус.* ⟨ *төрк.* ⟨ *фарс.*] *и.* **1.** Көньяҡтағы баҡса үҫемлеге.

**2.** Шул үҫемлектең ҡыҙыл күк ҡабыҡлы эре ҡыяр һымағыраҡ йәшелсәһе. *Баклажан консерваһы.*

**БАКЛА́Н** [*рус.*] *и.* Ҡыҫҡа ҡанатлы, оҙон ҡойроҡло, ҡара төҫтәге диңгеҙ ҡошо.

**БАКТЕРИО́З** [*рус.* ⟨ *гр.*] *и.* Бактериянан барлыҡҡа килгән үҫемлек ауырыуы.

**БАКТЕРИО́ЛОГ** [*рус.*] *и.* Бактериология буйынса белгес.

**БАКТЕРИОЛОГИК** *с.* Йоғошло ауырыу бактерияларын ҡулланыуға ҡоролған. *Бактериологик корал. Бактериологик һугыш.*

**БАКТЕРИОЛО́ГИЯ** [*рус.* ⟨ *гр.*] *и.* Бактериялар тураһындағы фән.

**БАКТЕРИОФА́Г** [*рус.* ⟨ *гр.*] *и.* Бактерияларҙы юҡ итеүгә һәләтле матдә.

**БАКТЕ́РИЯ** [*рус.* ⟨ *гр.*] *и.* Бер күҙәнәкле микроскопик организм; микроб. *Ауырыу бактериялары. Серетеү бактериялары.*

**БАКТЕРИЯЛАНЫУ** *к.* Бактериялы булыу (һөткә, тупраҡҡа ҡарата).

**БАКТЕРИЯЛАУ** *к.* Бактериялы итеү (һөттө, тупраҡты).

**БАКУЙ** *и. кар.* **ҡайырым.**

**БАКУС** *и. кар.* **ҡайырым.**

**БАҠ** *и. иҫк.* Бәхет. *Батыр булган егеттең маңлайында бак булыр.* «Батырша».

**БАҠА** *и.* **1.** Ырғып йөрөгән тарбаҡ аяҡлы ер-һыу йәнлеге; тәлмәрйен. *Тирә-як тын. Тик ҡай сакта якын күлдә бакылдаган бака тауыштары гына караңгы тынлыкты бер аҙ боҙа.* А. Карнай. *Ҡыт-кыт кыткылдай тауыктар, ҡаҙҙары каңгылдаша. Кискә табан әллә ҡайҙа бакалар бакылдаша.* Ш. Бабич./Ҡарауға йәмһеҙ, артыҡ йыуан кешегә мыҫҡыллап әйтелә. *[Мәгфүрә:] Анау быжыр бака, алланың кәһәре,.. уга ни калмаган, биҙәүгә!* һ. Дәүләтшина.

**2.** Ҡабырсаҡ (2 мәғ.) эсендәге йәнлек. *Бакаһы сыккан кабырсак.*

**3.** *диал.* Айыссыҡ.

◆ **Баҡа ебәге** *диал.* ылымыҡ. **Баҡа тамаҡ** *диал.* туймаҫ тамаҡ. **Баҡа һыуын сығарыу** һыу төшкәндә ҡолаҡҡа ингән һыуҙы һикереп сығарыу. *Сабир колагын усы менән каплап, һыңар аяклап һикереп, бака һыуын сыгарҙы.* Д. Бикташев. **Баҡа яңаҡ** ыйыҡлы яңаҡ.

● *Ат дагалаганда бака ботон кыҫтырган.* Әйтем. *Аулак күлгә бака хужа.* Әйтем. *Балык агынды, бака тонокто ярата.* Әйтем.

**БАҠАЙ** *и.* Йылғаның бәләкәй тармағы.

**БАҠАЙЫУ** *к. диал. кар.* **аҡайыу** 2.

**БАҠАН** *и.* Бәйгелә ярышып буйлай торған оҙон шыма бағана; һырғауыл. *Бакан буйлау.* ■ *Йәм-йәшел сирәмдәрендә йүгерешеп билге тибеү, ул бейек бакандарының башына үрмәләп менеү.* С. Яҡшығолов.

**БАҠАСАЙ** *и.* Һыуҙа мамыҡланып ятҡан йәшел үҫемлек; сай, тәлмәрйен ебәге. *Иҫке үҙәндәрҙе, бакасай, ылымык алган күләүектәрҙе буръяк һыу баҫкан.* З. Ураҡсин.

**БАҠ-БАҠ, баҡ та баҡ** *окш.* Өйрәк, тәлмәрйен ҡысҡырғанды белдергән һүҙ. *Бак-бак итеү. Бак та бак килеү.* ■ *Оҙон аяк бакалар һаҙга кереп яталар, бак-бак бакылдайҙар, яҙга бик шатланалар.* М. Бикбова.

**БАҠМА** [1] *и.* Ауырыу йәки зәғиф булыу сәбәпле ғүмер буйы ҡарауға мохтаж кеше; имгәк.

**БАҠМА** [2] *с. диал. ҡар.* **ялҡау.**

**БАҠМЫР** *и. диал. ҡар.* **ҡур** [1] 1.

**БАҠРА** *и.* Күрән сәскәле, өс ҡырлы ғына ҡара орлоҡло ҡый үләне. *Бер бойҙайға ун биш ҡара баҡра шаулап үҫкән ерҙе тултырып, балаҫ йәйгән кеүек ер өҫтөнә күрән сәскә атҡан кукрәп.* С. Ҡудаш.

**БАҠРАЙЫУ** *к. ҡар.* **аҡрайыу.** *Күҙе баҡрайып ултыра.*

**БАҠСА** *и.* **1.** Емеш, йәшелсә ултыртылған ер. *Алма баҡсаһы. Бәрәңге баҡсаһы.* ■ *Өйҙөң артынан таҡалып яланға ҡарай емеш-йәшелсә баҡсалары һуҙыла. Унда крыжовниктар, төрлө төҫтәге ҡарағаттар, ҡыҙыл, ҡара бөрлөгәндәр, ер еләге, сейә, алма .. тулып ултыра.* Ғ. Дәүләтшин.

**2.** Ағаслы, сәскәле ял итеү урыны. *Луначарский исемендәге баҡса ағастар араһында зәңгәр күҙгә кеүек ятҡан күле, эстрада театры, танса майҙаны һәм башҡа ҡыҙыҡтары менән халыҡтың ихтирамын яулап алған.*

♦ **Балалар баҡсаһы** мәктәпкә тиклемге балаларҙы ата-әсәһе эштә саҡта ҡарап тора торған ойошма. **Ботаника баҡсаһы** ғилми маҡсатта төрлө үҫемлек үҫтерелә торған урын.

**БАҠСАЛЫҠ** *и.* Баҡса биләп торған урын. *Ауылдың тирә-яғы баҡсалыҡ, ауылдың артынан урман һуҙылып китә.* Д. Юлтый.

**БАҠСАСЫ** *и.* Емеш, йәшелсә үҫтереү менән шөғөлләнгән кеше. *Кем булғандыр ергә тыуыр бала: бәлки шағир, бәлки инженер... бәлки булыр ине ҙур баҡсасы, атаҡлы Мичурин шикелле.* Ғ. Сәләм.

**БАҠСАСЫЛЫҠ** *и.* **1.** Хужалыҡтың емеш, йәшелсә менән шөғөлләнгән тармағы. *Баҡсасылыҡ бригадаһы.* ■ *Граждандар файҙаланыуында ярҙамсы хужалыҡты тотоу өсөн (мал һәм ҡош-ҡорт та инә), баҡсасылыҡ һәм йәшелсә үҫтереү, шулай уҡ индивидуаль торлаҡ төҙөү өсөн закон менән билдәләнгән тәртиптә бирелгән ер участкалары булыуы мөмкин.* Башҡорт АССР-ының Конституцияһы, 1984.

**2.** Емеш, йәшелсә үҫтереү ғилеме.

**БАҠСЫ** *и. ҡар.* **бағымсы.**

**БАҠТА** [*фарс.*] *и.* **1.** Малдың яҙ ҡойған йөнө. *Баҡтаны ҡойоу.* ■ *[Хисмәтулла] посёлка осона еткәс, атты уҙ яйына ҡуйҙы. Баҡтаһына ҡар уҡмашҡан хайуан ҡабаланманы.* Я. Хамматов.

**2.** *мыҫҡ.* Кейемдең йыртыҡ-мыртығы; алама.— *Ошо алама кейем менән, баҡтабыҙҙы ҡойоп, ҡыҙҙар араһына нисек оялмай барайыҡ.* Ш. Шәһәр.

**БАҠТАНСЫ** *и. иҫк.* **1.** *ҡар.* **ҡараусы** 1.

**2.** Һаҡлап торған кеше; һаҡсы.

● *Баҡтансыһы юҡ мал уңмаҫ, башлығы юҡ ил уңмаҫ.* Мәҡәл. *Батырға баҡтансы кәрәкмәй.* Мәҡәл.

**БАҠТИҺӘН** *мөн. ҡар.* **баҡһаң.** *Баҡтиһәң, ул .. упкәләп, өйөндә бикләнеп ята икән.* «Алпамыша».

**БАҠТЫРЫУ** [1] *к.* **1.** Күҙ йүнәлттереү; ҡаратыу. *Алға баҡтырыу.*

**2.** Тәрбиә иттереү; ҡаратыу. *Бала баҡтырыу.*

**3.** Күрәҙәлек иттереү; имләтеү. *Бағымсынан баҡтырыу.*

♦ **Күҙҙе баҡтырып** күҙгә туп-тура ҡарап. *Күҙҙе баҡтырып әйтеү.*

**БАҠТЫРЫУ** [2] *к. ҡар.* **бағындырыу** 1.

**БАҠҺАҢ** *мөн.* Көтөлмәгән бер нәмәне асыҡлағанда әйтелә. *Килмәй ҙә килмәй, баҡһаң, ауырый икән.*

**БАҠЫЙ** [*ғәр.*] *с.* **1.** Мәңге, мәңгелек. *[Сара — Рафиҡҡа:] Атайың да, еҙнәң дә ошо ерҙе йәмләп йәшәне. Был баҡый донъяның сиге юҡ.* Ә. Вахитов. *[Ҡарт:] Үткәне — фани, киткән ере — баҡый тигәндәй, әйҙә ята бирһен.* И. Ғиззәтуллин.

**2.** [*баш хәреф менән*] Ир-ат исеме.

♦ **Ғүмер баҡый** *ҡар.* **ғүмер.** *Әсәһенең ғүмер баҡый шул Һаҙый байҙарға эшләп, шуларға эшкә барған ерҙән үлеүе Ҡарамдың һарыуын ҡайната.* Н. Мусин.

**БАҠЫЛДАҠ** *с.* Баҡ-баҡ иткән (тәлмәрйен, өйрәккә ҡарата).

**БАҠЫЛДАУ** *к.* Баҡ-баҡ тип ҡысҡырыу, баҡ-баҡ итеү. *Баҡылдығы сығыу.* ■ *Тәлмәрйендәрҙең бар эше шул: бигерәк тә иртәле-кисле һыу эсенән баштарын сығаралар ҙа бөтә тирә-яҡты яңғыратып баҡылдарға тотоналар.* А. Карнай. *Яңғыҙлыҡтан йөҙәгән кәкүк саҡырҙы. Уға баҡылдап баҡа яуап бирҙе.* И. Ғиззәтуллин.

● *Ҡаҙ ҡаҡылдауын ҡуймаҫ, өйрәк баҡылдауын ҡуймаҫ.* Мәҡәл.

**БАҠЫЛДАШЫУ** *к. урт. ҡар.* **баҡылдау.** *Ауылдан алыҫ түгел йыуа төбәгендәге күлдәрҙә баҡалар баҡылдаша.* Т. Йәнәби.

**БАҠЫР** *и.* **1.** Ҡыҙғылт төҫтәге һуҙылыусан һәм еңел сүкелә торған йомшаҡ металл. *Баҡыр рудаһы. Баҡыр промышленносы. Баҡыр иретеү заводы. // Баҡыр аҡса. Баҡыр балдаҡ. Баҡыр ҡомған.* ■ *Урал тауҙың ҡуйынында алтын да, баҡыр ҙа бар* (Ҡобайырҙан). **Баҡыр ташы** баҡыр ҡатнаш тау тоҡомо.

**2.** *һөйл.* Шул металдан һуғылған аҡса. *Ул [үҫмер] билетлыҡ баҡыр һәрмәп, кеҫәһенә ҡулын тыҡты.* «Башҡортостан ҡыҙы», 1968, № 8.

♦ **Баҡыр тәтәй** *диал.* күк сәскә (*ҡар.* **сәскә** 2).

● *Баҡырҙы күпме йышһаң да алтын булмаҫ.* Мәҡәл.

**БАҠЫРАҠ** *с.* Баҡырып, ҡысҡырып тороусан. *Баҡыраҡ мал.*

**БАҠЫРАС** *и. диал.* **1.** Сүмес.

**2.** Баҡырса.

**БАҠЫРЛАНЫУ** *к.* Баҡыр ҡушылыу, баҡыр менән ҡапланыу.

**БАҠЫРЛАУ** *к.* Баҡыр ялатыу.

**БАҠЫРСА** *и.* Сәй ҡайната торған тотҡалы, моронло һауыт; сәйнүк. *Тағанға аҫылған баҡырсалағы сәй ҡайнап сыҡҡанса, Шафиҡ этен һыйланы.* Я. Хамматов.— *Сарсыным, тине малай. Баҡырса морононан бая ҡалған сәйҙе бер нисә йотом ғолтлатып эсте лә яңынан тымып ҡалды.* И. Ғиззәтуллин.

**БАҠЫРТЫУ** *к. йөкм. ҡар.* **баҡырыу.**

**БАҠЫРЫНЫУ** *к.* Кемгәлер асыуланып баҡырыу; ҡысҡырыныу.

**БАҠЫРЫУ** *к.* **1.** Нык итеп ҡысҡырыу (кәзә, һарыҡ, һыйыр малына ҡарата). *[Сәрби әбей:] Көтөүҙән ҡалғанға, иптәштәренән айырылғанға*

*күрә бакыра, мәҫкен кәзәм.* М. Ғафури. *Юғары оста сыбыртҡы шартлауы, мөгөҙ һыбыҙғы тауышы, һыйырҙар мөңрәүе, һарыҡтар баҡырыуы ишетелә. Иртәнсәкке тормош ҡайнай.* И. Көҙәпҡол.

**2.** *күсм.* Асыуланып яман ҡысҡырыу (кешегә ҡарата); аҡырыу. *Әмирханов менән ни әйткәндә белгәс, йөҙөнөң һөрөмөн ҡуйҙо: «Һай, ахмаҡ, был ниндәй оятһыҙлыҡ!» — тип баҡырҙы.* С. Агиш.

**БАҠЫРЫШЫУ** *к. урт. кар.* **баҡырыу** 1. *Бәрәстәрен юғалтып; һарыҡтар баҡырыша.* Һ. Дәүләтшина.

**БАҠЫТ** *и.* Һыу һеңешкән ауыр ағас; утыпшы.

**БАҠЫТЛАНЫУ** *к.* Һыуҙа оҙаҡ ятып һыу һеңеү (ағасҡа ҡарата).

**БАҠЫЯС** *с. диал. кар.* **беше** 1.

**БАЛ** [1] *и.* Ҡорт, иңкештең сәскә һутынан йыйып яһаған татлы ҡуйы матдәһе. *Сәскә балы. Йүкә балы. Кәрәҙле бал. Һитәле бал. Ҡыналы бал.* ■ *Бал ҡорттары май сәскәләренән тәүге балдарын йыя башланы.* Д. Юлтый. **Бал ҡыуғыс** балды кәрәҙҙән һурҙырта торған машина.

**2.** Шул матдәнән йәки шәкәрҙән әсетелгән иҫерткес эсемлек. *Шәкәр балы. Бал балы. Бал ҡойоу.* ■ *Хафиз ҡарт, бер-ике стакан бал эсеп алғас, һүҙгә йомартланып китте.* М. Тажи.

♦ **Ауыҙына бал да май** *кар.* **ауыҙ. Бал ҡорто** сәскә һутынан бал йыя торған ҡорт. **Бармағынан бал тама** оҫта ҡуллы кешегә ҡарата әйтелә. **Уҡыран бал** *диал.* **һитә.**

**БАЛ** [2] [*рус.* ⟨ *фр.*] Ҙур танса кисәһе. *Яңы йыл балы. Костюмлы бал. Маскарад балы.*

**БАЛА** *и.* **1.** Йәше бәләкәй ҡыҙ йәки малай. *Игеҙ бала. Ир бала. Ҡыҙ бала.* ■ *[Тәнзилә әбей:] Үҙ ғүмеремдә дүрт бала таптым. Береһе генә ҡыҙ бала. Башҡалары гел игеҙәк ир бала булды.* М. Тажи. **Имсәк бала** имгән бала. **Сей бала** яңы тыуған бала./Бер ата-әсәнән тыуған бер быуын кешеһе, ул йәки ҡыҙ. *Баш бала. Кинйә бала. Уртансы бала.*

**2.** *эйл. ф.* **балам** Яратып, иркәләп әйтелә. *[Һылыу әбей:] Миңлебай, балам, килен, торогоҙ әле, өйгә һыу үтә.* Т. Йәнәби. *[Әбей:] Һин кем булаһын, балам? Ни йомошоң бар, һылыуҡай?* (Әкиәттән).

**3.** Тереклектәрҙең яңы тыуған бәләкәсе. *Айыу балаһы. Йылан балаһы. Ҡарға балаһы. Сысҡан балаһы. // Бала айыу. Бала ҡорт. Бала әтәс.*

**4.** Сығышы менән ҡайҙа йәки нимәгәләр ҡараған кеше. *Башҡорт балаһы.* ■ *Салауат — Урал балаһы, Салауат — йөрәк кәғбәһе.* Ш. Бабич.

**5.** *купл.* Бала-саға өсөн тәғәйенләнгән нәмәне күрһәткәндә ҡулланыла. *Балалар велосипеды. Балалар врачы. Балалар кейеме. Балалар уйынсығы.*

**6.** *с. мәғ.* Бәләкәй. *Бала мендәр. Бала шәл.*

♦ **Ата балаһы** берәүҙең ҡәҙерлеһе; әҙәм балаһы. *[Айбулат:] Беҙ ҙә ата балалары бит, ә уҡырға һис мөмкинлек юҡ.* Һ. Дәүләтшина. **Бала йөнө** *шул уҡ* **бәпкә йөнө** (*кар.* **бәпкә**[1]). **Балаға уҙыу** ауырға ҡалыу.

● *— Ата-әсәгә икеләге лә бала, иллеләге лә бала.* Әйтем. *Баланың балаһы балдан татлы.* Әйтем.

**БАЛАҒА́Н** [*рус.* ⟨ *фарс.*] *и. диал.* Бәләкәй генә насар өй. *Мөйөштәре сереп, .. аумай саҡ торған тәҙрәһеҙ балаған эргәһенә яҡынлашҡан һайын Заһиттың йөрәге тарһылдап тибә.* Я. Хамматов.

**БАЛАҒАС** *и. диал. кар.* **солоҡ** 1.

**БАЛАҠ** *и.* Салбар, ыштандың төбөнән түбәнге яғы. *Оҙон балаҡ. Ҡыҫҡа балаҡ. Тар балаҡ.* ■ *Салихтың өҫтөндә ҡайтарма яғалы күлдәк, уны эскә ҡалдырып кейгән ҡара салбар, балағы бот төбөнә тиклем төрөлгән.* С. Агиш.

**БАЛАҠАЙ** *и. ирк. кар.* **бала** 1. *Кейәү балаҡай. Килен балаҡай.* ■ *— Ә хәҙер инде үҙең йөрөп ҡара. Йәле, балаҡай, нисек йөрөрһөң икән, атайың менән әсәйең күрһен әле.* М. Тажи.

**БАЛАҠАС** [1] *и. ирк. кар.* **бала** 1.

**БАЛАҠАС** [2] *и. диал.* Йәлләү.

**БАЛАЛА́ЙКА** [*рус.*] *и.* Рустарҙың өс мөйөш формаһындағы корпуслы, өс ҡыллы сиртмәле музыка ҡоралы. *Балалайка ҡылы. Балалайка уйнау.* ■ *Бер малай [стеналағы] балалайканы алып, сиртә башланы. Ул бик матур уйнай икән.* С. Агиш.

**БАЛАЛАНЫУ** *к.* Балаларса ҡыланыу, үҙендә бала кеүек тотоу. *[Нурулла — бисәһенә:] Үҙең балалангас, нишләйем һуң? Өндәшһәң бит, һине тыйырһың!* С. Ҡудаш.

**БАЛАЛАУ** *к.* Бала табыу, бала сығарыу. *Яңағына себен-серәкәй балалап, ир-егеттең башы ҡайҙа ятып ҡалмаған?* Салауат Юлаев.

**БАЛАЛЫҠ** *и.* **1.** Бала саҡ. *Балалыҡ йылдары.* ■ *Балалыҡтан сығып, яҡшы уҡ егет булып килгән ваҡыт ине.* Т. Йәнәби.

**2.** Балаларға хас холоҡ. *Хужаға ҡыҙҙарҙың сығыуы оҡшаманы: «Был ниндәй балалыҡ тағы!» — тип ҡысҡырҙы.* Д. Юлтый.

**3.** *диал.* Балаяткы.

**БАЛАН** *и.* **1.** Аҡ сәскә атып, ваҡ ҡына әсе ҡыҙыл емеш бирә торған ҡыуаҡ. *Балан, миләш ағастарының ап-аҡ сәскәләре күптән ҡойолған.* Н. Ҡәрип. **Айыу баланы** *кар.* **айыу. Тумыртҡа баланы** *кар.* **тумыртҡа.**

**2.** Шул ағастың емеше. *Балан бәлеше.* ■ *Ҡыҙылтүш, ҡарабаш турғайҙар балан, мышарҙы сүпләй-сүпләй, .. ботаҡтан ботаҡҡа һикерешеп уйнай.* М. Тажи.

♦ **Балан ирәк** һуҡ бармаҡтың бармаҡ һанап уйнағанда әйтелә торған исеме.

**БАЛАНЛЫҠ** *и.* Балан күп үҫкән урын. *Бер аҙҙан беҙ өйкөм-өйкөм ултырған муйыллыҡтар, баланлыҡтар араһынан атлай инек инде.* Ә. Вахитов.

**БАЛА́НС** [1] [*рус.* ⟨ *фр.*] *и.* **1.** *фин.* Счетты япҡанда керем һәм сығымды күрһәткән сағыштырма йомғаҡ. *Йыллыҡ баланс. Баланс төҙөү.* **Актив баланс** керемдең сығымдан артыҡ булған хәле. **Пассив баланс** керемдең сығымдан кәм булған хәле.

**2.** Үҙ-ара тигеҙләнергә тейешле нисбәттең һан яғынан сағылышы. *Мал аҙығы балансы. Сауҙа балансы.* ■ *Хәҙер малсылар мал аҙығы әҙерләүселәр эшенә, аҙыҡтың сифатына талапсанлыҡты көсәйткән һәм үҙ сиратында малға уны әҙерләп, баланс менән ашатырға, тәләфләмәҫкә тырыша.* «Башҡортостан ҡыҙы», 1986, № 1.

**БАЛА́НС** [2] [*рус.*] *и. йыйн. махс.* Ҡағыҙ һәм

целлюлоза етештереү өсөп ҡыҫҡа бүрәнә рәүешендә әҙерләнгән ағас материалы.

**БАЛАНСИР** [*рус.* ⟨ *фр.*] *и.* **1.** Арҡан буйлағанда тигеҙлекте һаҡлау өсөн ҡулланылған оҙон ҡолға.

**2.** *тех.* Машиналарҙа көсәр тирәләй бәүелмәле хәрәкәт яһап, көс, көсөргәнеш тыуҙырыу өсөн булған ике яҡлы һалмауыр. *[Скважиналарҙың] станок-качалкаларындағы балансир һиртмәләре, тәрән ҡоҙоҡтан һыу алғандағы кеүек, бер күтәрелеп, бер түбән төшөп .. ер майын һура ине.* Ғ. Ибраһимов. / Сәғәттә маятник хеҙмәтен үтәгән төп регулятор.

**БАЛАПАН** *и.* Бөркөт, ҡарсыға кеүек ҡоштарҙың иң ныҡлы, көслө балаһы.

**БАЛА-САҒА** *и. йыйн.* Балалар. *[Яңылбикә:] Өйҙә ҡалып торор ҙа кеше юҡ әле. Бала-сағаға ҡалдырып китһәң, өйҙө туҙҙырып бөтөрәләр.* Ғ. Дәүләтшин. *[Ҡәрибә әбей:] .. Бала-саға тыуһа — үҙ ризығы менән тыуа.* Я. Хамматов.

**БАЛА-СҮРӘ** *и. диал.* Бала-саға. *[Ғәзимә:] Ҡорсаңғылар, бала-сүрәһе менән килеп, һыйып тороуҙары етмәгән, бай балаһын ҡағалар.* Һ. Дәүләтшина.

**БАЛАҪ** [*фарс.*] *и.* Йөндән йәки сепрәктән ҡалын итеп һуҡҡан урын, ер ҡаралтыһы. *Йөн балаҫ. Сепрәк балаҫ.* ■ *Байҙар губернаторҙың килер юлына төрлө буяуға буяп, кәкерсәкләп кәзә йөнөнән һуҡҡан ҙур-ҙур балаҫтарын түшәп ташланы.* Ж. Кейекбаев. **Аҫалы балаҫ** төрлө биҙәк төшөрөп һуғылған балаҫ. **Буй(лы) балаҫ** төрлө төҫтән буй-буй итеп һуғылған балаҫ.

**БАЛАУЫҘ** *и.* Умарта ҡортоноң балға кәрәҙ яһаған матдәһе. *Кәрәҙле балауыҙ. Табаҡлы балауыҙ.*

♦ **Балауыҙ һығыу** йәш түгеү, илау. *[Хәтирә:] Йәшереп кенә илайым инде. Ағайың күрһә, ниңә балауыҙ һығаһың, ти, көлә.* Ғ. Ибраһимов.

**БАЛАУЫҘЛАНЫУ** *ҡ.* **1.** Балауыҙға буялыу.

**2.** Бешә, ҡата башлау (ашлыҡҡа ҡарата). *Бойҙай балауыҙлана башлаған.*

**БАЛАУЫҘЛАУ** *ҡ.* Балауыҙлы итеү, балауыҙ һөртөү.

**БАЛАҺЫНЫУ** *ҡ. һир.* Балаға һанау, бала итеп күреү. *[Нөгөш:] Мин дә ҡарап торманым, балаһынып ҡалманым, ҡылыс алып айҡаштым.* «Урал батыр».

**БАЛАҺЫТЫУ** *ҡ. һир.* Бала итеп ҡарау. *Балаһытып иғтибар итмәү.*

**БАЛАЯН** *и.* Бөркөт, ҡарсыға кеүек ҡоштарҙың уртансы балаһы.

**БАЛАЯТҠЫ** *и.* Ҡатын-ҡыҙҙың һәм терелэй тапҡан тереклектәрҙең бала ярала торған эске ағзаһы.

**БАЛБАЛ** *и.* Боронғо төрки халыҡтар һ. б. ҡуйған кеше һынындағы таш.

**БАЛҒА** *и.* **1.** Ҙур ауыр сүкеш. *Ҡурғаш кеүек ауыр балсыҡ ҡиҫәктәрен тимер лом, ҙур балғалар менән көсөргәнеп умырырға тура килде.* Н. Иҙелбай.

**2.** *иҫк.* Ай балта.

**3.** *диал.* Бағау.

**4.** *диал.* Сүкеш.

**БАЛҒАЛАҠ** *и.* Бал, май алып ҡаба торған бәләкәй ҡалаҡ. *Көмөш балғалаҡ.* ■ *[Үмәр] икмәк һындырҙы ла балғалаҡ менән май һоғона-һоғона, сәй эсергә кереште.* Һ. Дәүләтшина.

**БАЛДАҠ** *и.* **1.** Бармаҡҡа кейә торған дүңгәләк һымаҡ биҙәүес; ҡашһыҙ йөҙөк. *Көмөш балдаҡ. Сыңғалы балдаҡ. Һыҙма балдаҡ.* ■ *Көләйшә ғүмерлеккә ҡауышыу билгеһе итеп, бармағындағы балдағын Бикйәндең бармағына кейҙерҙе* (Әкиәттән).

**2.** Ҡылыс, бысаҡ кеүек нәмәләрҙең алҡымына кейҙерелә торған ҡоршау.

♦ **Йыллыҡ балдаҡ** ағас олононда йылдан йыл арта килеү һанынан ағастың йәшен билдәләп була торған ҡатлам.

**БАЛДАҠЛАНЫУ** *ҡ. төш. ҡар.* **балдаҡлау.** *Балдаҡланған ҡош.*

**БАЛДАҠЛАУ** *ҡ.* **1.** Ағастың ҡабығын түңәрәкләп әрсеү.

**2.** Ғилми маҡсатта ҡырағай ҡоштарға, балыҡтарға яҙыулы ҡалай кейҙереү.

**БАЛДЫҘ** *и.* **1.** Ҡатындың һеңлеһе.

**2.** *диал.* Ҡатындың энеһе йәки һеңлеһе (иренә ҡарата).

**БАЛЕРИНА** [*рус.* ⟨ *ит.*] *и.* Балет артисткаһы. *Беренсе милли балет менән бергә һокландырғыс балерина Тамара Хоҙайбирҙина ла үҫеп сыҡты.* «Ағиҙел», 1967, № 8.

**БАЛЕТ** [*рус.* ⟨ *ит.*] *и.* **1.** Театраль танса сәнғәте. *Классик балет. Рус балеты.*

**2.** Бейеүгә, матур тән хәрәкәттәренә ҡоролған музыкаль спектакль. *Балет музыкаһы. «Сыңрау торна» балеты.*

**БАЛЕТМЕЙСТЕР** [*рус.* ⟨ *нем.*] *и.* Опера һәм опереттала балет, танса, хореография номерҙарының авторы һәм ҡуйыусыһы.

**БАЛИҒ** [*ғәр.*] *с.* Үҫкән, йәше еткән. *Балиғ бала.*

□ **Балиғ булыу** буй етеү, үҫеү.

**БАЛЙЫ** *и. диал.* Бағау.

**БАЛКОН** [*рус.* ⟨ *ит.*] *и.* **1.** Йорттоң өҫкө ҡаттарынан тышҡа сығарып эшләнгән майҙансыҡ. *Балкон ишеге. Балконға сығыу.*

**2.** Театрҙың уртансы ҡатындағы тамаша урыны.

**БАЛҠ** *оҡш.* Көслө яҡтылыҡты белдергән һүҙ. *Балҡ итеү.*

**БАЛҠАР** Ҡабарда-Балҡар АССР-ында йәшәгән бер халыҡ һәм шул халыҡтың бер кешеһе (төрки телдәренең береһендә һөйләшә).

**БАЛҠ-БАЛҠ** *оҡш.* Ҡапыл-ҡапыл балҡ иткәндә белдергән һүҙ. *Балҡ-балҡ итеү. Балҡ-балҡ килеү.*

**БАЛҠЫЛДАУ** *ҡ.* Балҡ-балҡ итеү, балҡ-балҡ килеү. *Балҡылдап уттар яна.*

**БАЛҠЫТЫУ** *ҡ.* **1.** Көслө итеп яҡтыртыу, ныҡ ялтыратыу. *Ҡояш сыҡты, донъяға йәм аңҡытты, нур балҡытты.* Ш. Бабич.

**2.** *күсм.* Шатлыҡ, ҡыуаныстан яҡтыртыу (күҙҙе, йөҙҙө).

**БАЛҠЫУ** *ҡ.* **1.** Көслө итеп яҡтыртыу, ныҡ ялтырау; балҡ итеү. *Ҡояш нуры балҡый.* ■ *Төнөн ҡуҡҡә ай ҡалҡһа, алтындай балҡый Урал тау, көндөҙ ҡуҡҡә көн ҡалҡһа, көмөштәй балҡый Урал тау.* Салауат Юлаев. *Ҡаланың бөтә йорттарында ла ут һүнгән булған, бер генә йортта ут балҡып янып торған* (Әкиәттән).

**2.** *кусм.* Шатлыҡ, ҡыуаныстан яҡтыртыу (күҙгә, йөҙгә ҡарата). *Башын ғорур күтәреп, көндәй балҡып, Золхизә ҡарапҡа табан атланы.* З. Биишева.

**БАЛҠЫШ** *и.* **1.** Ниҙәндер таралған, сағылған сағыу, көслө яҡтылыҡ. *Көнсығышта күк көмбәҙенең яртыһынан артығы тиңдәшһеҙ яҡты балҡыш менән солғанған.* М. Кәрим. *Ҡайһы яҡтарҙан ғына килһәң дә алыҫтан балҡып ултыра ул башҡалабыҙ. Йылдар үткән һайын уның балҡышы көсәйә бара.* С. Әлибаев.

**2.** Шатлыҡ, бәхеттән күҙҙең йылтырауы, сырайҙа шатлыҡ ҡатыш сағылыш. *Күҙҙәреңдең бер балҡышын күреп, мин хайрандың күҙе ҡамашты, ерең буйлап гәмһеҙ атлай инем, күктәреңә ҡарап аҙаштым, ике күҙем берсән ҡамашты.* М. Кәрим.

**БАЛЛ** [*рус.* ⟨ *фр.*] *и.* **1.** Берәй тәбиғәт күренешенең көсөн, ҡеүәтен үлсәү берәмеге. *Елдең көсө дүрт балға етте.*

**2.** Уҡыусының өлгәшен һәм тәртибен билдәләй торған цифрлы баһа; отметка. *Биш баллы система. Балл етмәү.* / Спорт ярыштарындағы уңышты билдәләй торған баһа. *Иң юғары балдар суммаһын йыйыу.*

**БАЛЛА́ДА** [*рус.* ⟨ *фр.*] *и.* Хикәйәт йәки экиәткә нигеҙләп яҙылған бәләкәй шиғри әҫәр. *Баллада яҙыу.* ■ *Ғ. Сәләмдең рус поэзияһының революцион традицияларына нигеҙләнеп яҙған «Гренада» исемле балладаһы уҡыусыға билдәле.* Ә. Хәкимов.

**БАЛЛАНДЫРЫУ** *к.* Баллыға әйләндереү, баллы итеү. *Ниңә миңә иренгә бал һөртөп баллындырырға, кемдәрҙелер алдандырырға?* Й. Солтанов.

**БАЛЛАНЫУ** *к.* **1.** Баллыға әйләнеү, шәрбәтле булыу. *Сәскә атһа, гөлдәр ай баллана, бал ҡорттары ҡуныр бал ала* (Халыҡ йырынан).

**2.** Балға буялыу.

**БАЛЛА́СТ** [*рус.* ⟨ *ингл.*] *и.* **1.** Ауырлыҡ өсөн һалынған йөк (ҡарап аунаҡламаһын, аэростат ҡапыл күтәрелмәһен өсөн).

**2.** *кусм.* Кәрәкһеҙ артыҡ нәмә.

**3.** Тимер юлдағы шпал аҫтына һалынған ҡырсын, ҡом.

**БАЛЛАУ** *к.* Бал ҡушыу, балға болғау. *Бауырһаҡ татлы булыр баллағанда.* Аҡмулла.

**БАЛЛИ́СТИК** [*рус.*] *и.* Баллистика буйынса белгес.

**БАЛЛИСТИ́К** *с.* Баллистикаға мөнәсәбәтле.

◆ **Баллистик ракета** осҡанда двигателенең эше бөткәндән һуң ирекле ырғытылған есем траекторияһы буйынса төшкән ракета.

**БАЛЛИ́СТИКА** [*рус.* ⟨ *нем.*] *и.* Артиллерия снаряды, пуля, мина, авиабомба, реактив снаряд, гарпундарҙың һ. б. хәрәкәте тураһындағы фән. *Тышҡы баллистика. Эске баллистика.*

**БАЛЛО́Н** [*рус.* ⟨ *фр.*] *и.* **1.** Шыйыҡлыҡ йәки газ өсөн булған ябыҡ (быяла, металл, резина һ. б.) һауыт. *Газлы баллон.*

**2.** Эсенә тын тултырылған тәгәрәмәс шины. *[Моратша:] Бөгөн ике рейс яһаным .. һуңғыһында баллон шартланы, шуға оҙаҡланым.* М. Хәйҙәров.

**3.** Аэростаттың газ тултырылған көбө.

**БАЛЛЫ** *с.* **1.** Балы булған, бал ҡушылған. *Беҙҙең ҡоҙа хәлле икән, йыуасаһы баллы икән* (Халыҡ йырынан). / Татлы һуты булған, бал тәме әйткән. *Баллы үлән.*

**2.** *кусм.* Татлы, яғымлы (һүҙгә, телгә ҡарата).

◆ **Баллы бабай** *бот.* ирен сәскәлеләр ғаиләһенә ҡараған аҡ сәскәле күп йыллыҡ үлән.

**БАЛЛЫҠАЙ** *и. диал.* **1.** Һөтлөгән.

**2.** Туҡранбаш.

**БАЛПАН** *и. диал.* Олпатлы.

● *Бай булһаң, балпан бул; ярлы булһаң, ҡалтан бул.* Мәҡәл.

**БАЛПАН-БАЛПАН** *оҡш.* Ауыш-тыуыш хәрәкәтте белдергән һүҙ; алпан-толпан. *Хәҙрәт ҡырандасынан төшөп, яуҙы еңеп ҡайтҡан батыр кеүек балпан-балпан баҫып, аҡ кейеҙгә барып ултырҙы.* И. Көҫәпҡол.

**БАЛСЫҠ** *и.* **1.** Һыуға иҙелеп, һемәшеп торған йомшаҡ тау тоҡомо. *Аҡ балсыҡ. Ҡара балсыҡ. Һары балсыҡ. Балсыҡ баҫыу. Балсыҡ менән һылау. Балсыҡ ҡаҙыу.* // *Балсыҡ өй.* ■ *[Оҫта] балсыҡтан, ҡомдан әүәләп, сәй эсә торған ҡасалар яһай икән.* З. Биишева.

**2.** *диал.* Тупраҡ.

**БАЛСЫҠЛЫ** *с.* Балсыҡ ҡатыш. *Балсыҡлы тупраҡ.*

**БАЛСЫҠТАШ** *и.* Ер ҡатламдары аҫтында баҫылып, балсыҡтан яһалған таш.

**БАЛСЫМАҠ** *диал. кар.* **бысый 1.**

**БАЛТА** *м.* Сабып ҡырҡыу, юныу өсөн хеҙмәт иткән яҫы йөҙлө, ялпаҡ төйҙәле, оҙон һаплы ҡорос ҡорал. *Балта йөҙө. Балта мороно. Балта оңғоһо. Балта төйҙәһе. Балта һағағы. Балта ҡыны. Арҡыры балта. Тараҡ балта.* ■ *Айбулат балтаны Маруся ҡулынан тиҙ генә алды ла, күп итеп утын ярып ташланы.* Һ. Дәүләтшина. **Сәкен балта** 1) ныҡ ағастан яһалған оҙон һаплы, нәҙек билле һуғыш балтаһы; 2) башлы шәкәрҙе вата торған бәләкәй балта.

◆ **Балта оҫтаһы** ағастан йорт-ҡура һалыу менән шөғөлләнгән оҫта; балтасы. **Балтаһы һыуға төшкән** кәйефе юғалып, күңелһеҙләнеп торған кешегә ҡарата әйтелә. **Һапһыҙ ҡара балта** башын баҫып туҡтауһыҙ эшләп йөрөгән йыуаш кешегә ҡарата әйтелә.

**БАЛТАСЫ** *и.* Ағастан йорт, ҡура һалыу менән шөғөлләнгән оҫта.

**БАЛТЛАУ** *к. диал.* Балҡыу.

**БАЛТЫР** *и.* Аяҡ енсегенең йыуан ере; бурбай. *Балтыр ите.* ■ *Йыуан ғына балтырлы һимеҙ бер ҡыҙ урталға сыҡты.* Т. Йәнәби. *Итексе .. ҡуныстың оҙонлоғон, аяҡтың алҡымын, балтыр йыуанлығын, табандың оҙонлоғон үлсәп килтерергә ҡушты.* Ғ. Ибраһимов.

**БАЛТЫРҒАН** *и.* Көпшә һабаҡлы, киң киртләс япраҡлы, сатыр сәскәле күп йыллыҡ үлән (йәш сағында япрағын, көпшәһен ашайҙар). *[Тайфа — Дәүләтгәрәйгә:] Эшләмәйбеҙ. Заводыңды үҙең һалып бөтөр. Балтырған ашаһам да торормон әле.* Н. Ҡәрип.

**БАЛУАН** *и.* Көслө, ныҡ, ҙур кәүҙәле кеше; бәһлеүән.

**БАЛЫҒЫУ** (балыҡ*ғ*) *к. диал. кар.* **бығыу** [1] 2. *[Барсын — Сәғиҙәгә:] Кейәү үләне балыҡ-*

*канмы? Сак кына һыуыт та һөлөк яраһына яба һалайык.* Һ. Дәүләтшина.

**БАЛЫҠ** *и.* **1.** Айғолаҡлы, йөҙгөс ҡойроҡло, һалҡын ҡанлы, умырҡалы һыу тереклеге. *Балык ите. Балык майы. Балык һурпаһы. Балык тәңкәһе. Балык тотоу. Балык үрсетеү. Балык ыҫлау.* ■ *Улар [малайҙар] караңғы төшкәнсә балык кармаклай ҙа яр башында ут яғып, балык һурпаһы бешерә.* Ә. Вәли. **Атбаш балыҡ** башы ат башына оҡшаңҡыраған ваҡ диңгеҙ балығы. **Ҡорбан балығы** аҡ тәңкәле йоҡа яҫы тәнле сөсө һыу балығы. **Сәгер балыҡ** һаҙандар ғаиләһенән булып, ҡорбан балыҡҡа оҡшап торған аҡһыл төҫһөҙ күҙле балыҡ. **Табан балыҡ** эре һарғылт тәңкәле, яҫы тәнле күл балығы. **Шырт балыҡ** *диал.* этеш.

**2.** *(баш хәреф менән) астр.* Зодиактың бере (Һыуҡояр һәм Ҡуҙы йондоҙлоҡтары уртаһында урынлашҡан).

♦ **Балыҡ кеүек** йылҡылдап торған көр малға ҡарата әйтелә. **Бер балыҡ башын сәйнәү** әйләнгән һайын бер нәмәне һөйләү.

**БАЛЫҠСЫ**[1] *и.* Балыҡ тотоу менән шөғөлләнгән кеше.

**БАЛЫҠСЫ**[2] *и.* Бер башҡорт ырыуының исеме.

**БАЛЫҠСЫЛАУ** *к.* Балыҡ тотоу менән шөғөлләнеү.

**БАЛЫҠСЫЛЫҠ** *и.* Хужалыҡтың балыҡ менән шөғөлләнгән тармағы. *Балыксылык артеле. Балыксылык хужалығы.*

**БАЛЬНЕО́ЛОГ** [*рус.*] *и.* Бальнеология буйынса белгес.

**БАЛЬНЕОЛО́ГИЯ** [*рус.* ⟨ *лат.* + *гр.*] *и.* Минераль һыуҙың физик һәм химик сифатын, шифаһын өйрәнә торған медицина тармағы.

**БАМБУ́К** [*рус.* ⟨ *фр.*] *и.* Ағас һымаҡ бейек булып үҫә торған быуын-быуын ҡыуыш һабаҡлы, ҡыяҡ япраҡлы йылы яҡ үҫемлеге. // *Бамбук таяк.*

**БАНА́Н** [*рус.* ⟨ *исп.*] *и.* **1.** Тропикта үҫә торған эре япраҡлы, эре сәскәле бейек үҫемлек (емеше һәм сүсе өсөн үҫтерелә).

**2.** Шул үҫемлектең ҡалын йомшаҡ ҡабыҡлы оҙонса емеше.

**БА́НДА** [*рус.* ⟨ *ит.*] *и.* Ҡоралլы башкиҫәрҙәр төркөмө. *Колчак бандалары тыныс халыкты аяуһыҙ язалай, совет власы яклы кешеләрҙе ата.* «Совет Башҡортостаны», 1969, 19 октябрь.

**БАНДА́Ж** [*рус.* ⟨ *фр.*] *и.* **1.** Эсте күтәртеү, бүҫерҙе һ. б. ҡыҫып быуыу өсөн ҡулланылған билғау.

**2.** *тех.* Машинаның төрлө өлөшөнә кейҙерелә торған тимер ҡоршау.

**БАНДЕРО́ЛЬ** [*рус.* ⟨ *фр.*] *и.* **1.** Почта аша ебәрелгән нәмәләрҙе төргән ҡағыҙ. / Шул ҡағыҙға төрөп, почта аша ебәрелгән нәмә, *Китапты бандероль менән ебәреү.*

**2.** Пошлина түләнгәнлеген күрһәтеү өсөн тауарға йәбештерелгән ҡағыҙ. *[Салих] һары кагыҙҙан бер әсмухә тәмәке һыйырлык кап яһай, уга тәмәке тултыра ла бандероль йәбештерә.* Х. Мохтар.

**БАНДИ́Т** [*рус.* ⟨ *ит.*] *и.* Бандала йөрөгән кеше; башкиҫәр, юлбаҫар. *Бандит шайкалары Өмөтбайҙың тауыктарына тиклем талап киткән.* Ғ. Дәүләтшин.

**БАНДИТЛЫҠ** *и.* Башкиҫәрҙәр эше. *Бандитлыкта йөрөү. Бандитлык кылыу.*

**БАНДУ́РА** [*рус.*] *и.* Украиндарҙың күп ҡыллы, киң грифлы сиртмә музыка ҡоралы.

**БАНК** [*рус.* ⟨ *фр.*] *и.* **1.** а) Социалистик илдәрҙә: халыҡ хужалығы планына ярашлы предприятиеларҙың ағымдағы эшмәкәрлегенә кредит асыуҙы үтәгән һәм капитал һалыуҙарҙы финанслау, предприятиелар менән хужалыҡ органдары араһында ҡул аҡсаһыҙ иҫәпте һәм ҡулда булған аҡсаларҙың үҙәкләштерелгән әйләнешен ойошторған дәүләт учреждениеһы. *СССР дәүләт банкыһы. Коммуналь банк;* б) капиталистик илдәрҙә: ссуда капиталын туплап, уны табыш һәм өҫтәмә табыш алыу өсөн капиталистар ҡарамағына биргән предприятие. *[Ныязгол:] Бер эшем барып сыкһа, ер банкыһындагы крәҫтиәндәр өсөн асылган йөҙ егерме алты мең алтын минең кулда буласак* Һ. Дәүләтшина.

**2.** Ҡайһы бер кәрт уйынында: конға һалынған билдәле аҡса суммаһы. *[Индрил] ҙурырак банк отһа: «Очко!» — тип кыскырып ебәрә, кәрттәрен ыргыта һалып, .. аксаларҙы үҙенә тартып ала.* Д. Юлтый. **Банк сөйөү** кәрт уйнағанда уртаға аҡса һалыу.

**БА́НКА** [*рус.* ⟨ *пол.*] *и.* **1.** Ғәҙәттә цилиндр рәүешендәге быяла, ҡалай һауыт. *Консерва банкалары асылды. Колбаса туралды. Гаврилов .. икмәк телде.* Ф. Иҫәнғолов.

**2.** *мед.* Дауалау өсөн тәнгә ултыртыла торған бәләкәй генә быяла һауыт. *Банка ултыртыу.*

**БАНКЕ́Т** [*рус.* ⟨ *фр.*] *и.* Берәй тантана хөрмәтенә ойошторолған һый. *Банкет ойоштороу. Банкетка сакырыу.*

**БАНКИ́Р** [*рус.* ⟨ *фр.*] *и.* Капиталистик илдәрҙәге банк (1 *мәғ.*) хужаһы йәки эре акционер.

**БАНКРО́Т** [*рус.* ⟨ *фр.*] *и.* Бурысҡа батып бөлгән кеше йәки ойошма.

**БАНКРОТЛАНЫУ** *к.* Банкрот булыу, банкротҡа әйләнеү.

**БАНКРОТЛЫҠ** *и.* Бурысҡа батҡан, бөлгән хәл. *Банкротлыкка калыу.*

**БАНТ** [*рус.* ⟨ *нем.*] *и.* Элмәкләп бәйләнгән таҫма. *[Кыҙ] сәсен тарай ҙа үреп, бант тага.* Ф. Рәхимғолова.

**БА́НТИК** [*рус.*] *и.* Бәләкәй генә бант. *Ренаттың артынан .. сәсенә күбәләк төҫлө итеп бантик таккан бәләкәй генә кыҙ әйәргән.* Ф. Иҫәнғолов.

**БАОБА́Б** [*рус.* ⟨ *эф.*] *и.* Бик йыуан олонло, тарбаҡ сатырлы тропик ағас.

**БАП** *и.* Тәрбиә, ҡәҙер. *Бапһыҙ булган ак толпар сапһа ла быуынын яҙа алмаҫ.* «Иҙеүкәй менән Мораҙым».

**БАПАҠ** *и.* Балаларҙы ҡурҡыта торған уйҙырма яман зат. *[Гөльямал:] Өҫ-башымды ла карап торманым. Кәйнешем күрһә, таныма҇ә әле. Ниндәй бапак килгән тиер.* Я. Хамматов.

**БАПЛАУ** *к.* **1.** Ҡәҙерләп тәрбиәләү. *Һөйөп, баплап, бала үҫтереү.*

**2.** Яратып, күңел һалып, еренә еткереү. *Баплап эшләү. Баплап ултырып сәй эсеү.* ■ *Оҫолло еңгәнең һыйлы итеп әсеткән, баплап һыуыткан*

*яҡшы ҡымыҙын бер-ике алдыр эсеү менән үк башҡа сыға.* Ғ. Дәүләтшин.

**БАПТИ́ЗМ** [*рус.* ⟨ *гр.* ] *и.* Нигеҙендә алла менән туранан-тура (сиркәү аша түгел) аралашыу принцибы ятып, балиғ булғас ҡына суҡындырыуҙы рөхсәт иткән протестантизм төрө.

**БАПТИ́СТ** [*рус.*] *и.* Баптизм йүнәлешендә торған кеше.

**БАР** [1] *мөн.* **1.** Кемдең йәки нимәнеңдер ғәмәлдә булғанлығын белдерә; *киреһе* юҡ. *Атым бар — йүгәнем юҡ, дәртем бар — һөйгәнем юҡ* (Халыҡ йырынан).— *Тағы ла һөйләүселәр бармы? Булмаһа, йомғаҡ яһайыҡ та йыйылышты бөтөрәйек.* М. Тажи. *[Әсә:] Тик кенә ултырығыҙ, мин үлгәс талашырһығыҙ, мин барҙа тыныс ҡына тороғоҙ.* С. Агиш.

**2.** Хәбәр функцияһында килеп, нимәнеңдер булырға ихтималлығын йәки тейешлеген белдерә. *[Ғариф:] Әле бит бөтөнләй китмәгән, ҡаралаһы бар, әллә ҡалдырып та ҡуйырҙар.* М. Ғафури.— *Ҡуйсы әле, ниндәй кеше икәнен дә белмәйһен, изге кеше булыуы бар, үҙеңә насар булып ҡуймаһын* (Әкиәттән).

◆ **Бар тип тә белмәү** нимәнелер иҫәпкә алмау, ҡайғыртмау.

● *Бар яраштырыр, юҡ талаштырыр.* Мәҡәл. *Барҙың барлығы тейер, юҡтың тарлығы тейер.* Мәҡәл.

**БАР** [2] *билд. а.* Бөтә булған; һәммә. *Ғариф ҡарттың тәҡдимен йыйылыштағы бар кеше урынлы тапты.* Б. Бикбай.

**БАРАБА** [1] *и.* Ҡыҙғылт супай башлы, күк аралаш ҡанатлы эре буҙ турғай; суҡ турғай.

**БАРАБА** [2] *с. диал.* Аумаҡай.

**БАРАБА́Н** [*рус.*] **1.** Ике яҡлап тире менән тарттырып эшләнгән ҡыуыш цилиндр формалы, дөңгөрләтеп һуға торған музыка ҡоралы. *Барабан таяҡтары. Барабан ҡағыу.*

**2.** Төрлө машина һәм механизмдың цилиндр кеүек детале. *Револьвер барабаны. Сепаратор барабаны.* ■ *Барабан тос көлтәләрҙе йотоп ебәрә лә, геү-ү, гөрһ иттереп һаламын атып ташлай.* Ф. Исәнғолов.

◆ **Ярыҡ барабан** ауыҙында һүҙ тормаған кешегә ҡарата әйтелә.

**БАРАБАНСЫ** *и.* Барабан ҡағыусы.

**БАРА́К** [*рус.* ⟨ *фр.*] *и.* Ваҡытлыса йәшәү өсөн ағас йәки таҡтанан эшләнгән. *Эшселәр бараҡы. Баракта тороу.*

**БАРА́Ҡ** *с.* Оҙон йөнлө, йөнтәҫ. *Бараҡ ауыҙлы ялбыр ҡара эт .. ҡапыл уға [Айбулатҡа] ташланды.* Һ. Дәүләтшина.

**БАРАМАН** *и. иҫк.* Таныш кеше; белеш.

● *Бараманың бар булһа, барып айран эсерһең.* Мәҡәл.

**БАРА́НКА** [*рус.*] *и. һөйл.* Автомобилдең дүңгәләк рәүешендәге руле. *[Сәләймән] баранканы бер туҡтауһыҙ борғолаған шоферҙың хәрәкәтен күҙәтте.* Я. Хамматов.

**БАРА-ТОРА** *р.* Күпмелер ваҡыттан һуң; аҡрынлап; тора-бара. *Бара-тора Өйрәнсектең тупаҫ балсыҡ көршәктәренә көн бөткән.* З. Биишева.

**БАРАУАЙҺЫҘ** *с. диал.* Тупһыҙ.

**БАРБАРИ́С** [*рус.* ⟨ *лат.*] *и.* **1.** Ҡара ҡусҡыл ҡыҙыл төҫтәге ваҡ ҡына әсе емеш биргән сәнскәкле көньяҡ ҡыуағы.

**2.** Шул ағастың емеше. *Барбарис вареньеһы.*

**БАРҒЫЛАУ** *ҡ.* Һирәк-һаяҡ барыу. *Барғылап йөрөү.*

**БАРДА́** [*рус.*] *и.* Шарап ҡыуғанда, һыра ҡайнатҡанда төпрә рәүешендә бүленеп, мал аҙығы итеп файҙаланыла торған ҡалдыҡ.

**БАРЕЛЬЕ́Ф** [*рус.* ⟨ *фр.*] *и.* Ҡабартып төшөрөлгән скульптура һүрәте.

**БА́РЖА** [*рус.* ⟨ *фр.*] *и.* Үҙе йөрөмәй, буксир йәки толкач ярҙамында күсә торған яҫы төплө ҙур йөк кәмәһе. *Аға һалдар.. Ана буксир килә баржаһына иген тултырып.* Н. Нәжми.

**БАРИД** [*ғәр.*] *и. иҫк. кит.* Һыуыҡ, һалҡын. *Мулла Ғәлимйән барид шул, йәнгә бик һалҡын бата. Булмаһа һалҡын яғы, булмаҫмы ине алтын ата?* Ш. Бабич.

**БА́РИЙ** [*рус.* ⟨ *гр.*] *и.* Химик элемент, аҡ төҫтәге йомшаҡ металл.

**БА́РИН** [*рус.*] *и.* **1.** Революцияға тиклемге Россияла: алпауыт. *Ул [Вася] кисә генә йәш баринды һамарға алып китте.* Һ. Дәүләтшина.

**2.** Революцияға тиклемге Россияла өҫтөн ҡатлам кешеһе. *Бер мәл шулай беҙҙең Бужәкәй ауылына бер .. барин килеп төшә* (Хикәйәттән).

**3.** *күсм.* Эш яратмаған, үҙ эшен кешенән эшләткән кеше.

**БАРИТО́Н** [*рус.* ⟨ *ит.*] *и.* **1.** Бас менән тенор араһындағы ирҙәр тауышы. *Баритон менән йырлау.* / Шундай тауыш менән йырлаған кеше.

**2.** Торбанан бер октаваға түбән тауыш сығарған тынлы музыка ҡоралы.

**БАРКА́С** [*рус.* ⟨ *гол.*] *и.* **1.** Күп ишкәкле ҙур кәмә.

**2.** Портта йөк ташый торған үҙе йөрөмәлә кәмә.

**БАРҠ-БАРҠ, барҡ та барҡ** *окш.* Ҡош тауышын белдергән һүҙ. *Барҡ-барҡ итеү. Барҡ-барҡ килеү.*

**БАРҠЫЛДАҠ** *и.* **1.** Сыбар буҙ төҫтәге эре турғай. *Урманда ҡыштырлаған тауыш ишетелә. Бүрекле турғай, ҡыҙылтүш һәм барҡылдаҡтар ағаста ҡалған миләш, балан, әлморон һәм башҡа емештәр менән туҡлана.* «Совет Башҡортостаны», 1986, 16 ғинуар.

**2. Барҡылдаҡ һымаҡтар, барҡылдаҡтар** *зоол.* Турғайҙар отрядына ҡараған ҡоштар ғаиләһе (барҡылдаҡ, һандуғас һ. б. ҡарай).

**БАРҠЫЛДАУ** *ҡ.* Барҡ-барҡ итеп ҡысҡырыу, барҡ-барҡ килеү. *Барҡылдығы сығыу.*

**БАРЛАНЫУ** *ҡ. төш. ҡар.* **барлау.**

**БАРЛАУ** *ҡ.* Тикшереп, теүәлме-түгелме тип иҫәпләү. *Командирҙар .. эскадрондарҙы барланы һәм һөжүмгә күтәрелергә әҙерләнде.* Ә. Ихсан. *[Зөфәр] аттарын барлай. Барлап сыҡҡас, Йондоҙғашка юклығын белә лә, .. эҙләргә китә* (Әкиәттән).

**БАРЛАШЫУ** *ҡ. урт. ҡар.* **барлау.**

**БАРЛЫ** *с.* Етеш, мул тормошло; хәлле. *Барлы кеше. Барлы тормош.* ■ *[Әбей:] Был ил, балам, барлы ғына булырға окшай. Насип булһа, бер аҙ тороп китербеҙ.* К. Мәргән.

**БАРЛЫҒЫ** *билд. а.* **1.** Бөтә булғаны, ни бары. *Минең барлығы бер һум аҡсам ҡалған.*

**2.** Бөтәһе, һәммәһе. *Арбаға барлығы егерме биш мера арыш тейәлде.* Ғ. Дәүләтшин.

**БАРЛЫҠ** [1] *и.* Бар булған хәл; тәбиғәт, булмыш. *Гөлйөҙөм бөтә барлығы менән шиғри тәбиғәтле, тәрән тойғоло ине.* Һ. Дәүләтшина. **Барлыҡҡа килеү** юҡтан барға әйләнеү; ғәмәлгә килеү.

**БАРЛЫҠ** [2] *и.* Тормоштағы етешлек; муллыҡ. *Халыҡ хәҙер барлыҡ менән, туҡлыҡ менән йәшәй.*

**БАРЛЫҠ** [3] *билд. а.* Бөтә булған; һәммә. *Күбәләктең бар йәме, барлыҡ хаяты гөл менән.* Ш. Бабич.

**БАРЛЫҠЛЫ** *с.* Етеш тормошло, етешле. *Барлыҡлы кеше.*

**БАРЛЫ-ЮҠЛЫ** *с.* Булыр-булмаҫ, әҙ-мәҙ. *Келәтһеҙ кешеләр барлы-юҡлы игенен аласыҡтағы көбө, алап эсенә тултырған.* Ж. Кейекбаев.

**БАРМАҠ** *и.* Ҡул, аяҡ осондағы быуынтыҡлы хәрәкәтсел ағза. *Йыуан бармаҡ. Оҙон бармаҡ. Баш бармаҡ. Сығанаҡ бармаҡ. Урта бармаҡ. Һуҡ бармаҡ. Бармаҡ бите. Бармаҡ осо. Бармаҡ төбө. Бармаҡ һөйәге.* ■ *Гармунсы .. бармаҡтарын гармун теле буйлап йүгертте.* Я. Хамматов.

◆ **Бармаҡ башындай** 1) ҙур нәмәне бәләкәй итеп күрһәткәндә әйтелә. *Бармаҡ башындай ғына май;* 2) бәләкәй нәмәне ҙур итеп күрһәткәндә әйтелә. *Бармаҡ башындай миң.* **Бармағы үҙенә ҡәкре** үҙен генә ҡайғыртҡан кеше тураһында әйтелә. **Бармаҡ менән генә һанарлыҡ** бик әҙ. *Ул саҡта ауылдан унынсыны бөтөп сығыусылар бармаҡ менән генә һанарлыҡ ине. Шуға күрә Ҡәйүмов уны [Миҙхәтте] ҡайтыу менән колхозға хисапсы итеп алды.* Н. Мусин. **Бармаҡ осондай** саҡ ҡына, әҙ генә. *Күпме кеше зар илай, алланан мәрхәмәт һорай,.. ә алланың бер генә лә, бармаҡ осондай ҙа мәрхәмәте юҡ.* Д. Юлтый. **Бармаҡты тешләрҙәй булыу** бик ныҡ үкенеү. **Урта бармаҡ кеүек** бик шәп (кешегә ҡарата). *Урта бармаҡ кеүек егеттәр .. һуғышҡа китә.* Ж. Кейекбаев.

**БАРМАҠСЫ** *и. диал.* Уймаҡ.

**БАРМАҠСЫН** *и.* Бирсәткә бармағы. *Аҡ бирсәткәң бармы әллә, бармаҡсыны тармы әллә* (Халыҡ йырынан)./Бармаҡҡа кейҙерә торған күн йәки резина ҡап.

**БАРНАҒЫЛ** *и. ҡар.* **барнау** [1] *[Ҡорбан:] Ҡара таңдан ҡара кискә тиклем эшләйһең, ә эш хаҡы атлыға көнөнө — 3 барнағыл, йәйәүлегә — 2 барнағыл.* А. Таһиров.

**БАРНАУ** [1] *и. иҫк.* Боронғо өс тинлек баҡыр аҡса. *Эй ҡоҙаның бүләге, ошомо икән күргәне, етмешлек тип көткән булһаҡ, һуҡыр барнау биргәне* (Туй йырынан).

● *Бер барнау юҡ кеҫәлә, ике күҙе бисәлә.* Мәҡәл.

**БАРНАУ** [2] *с. иҫк.* Ҡәҙере булған, ҡәҙерле. *Малын түгел, йәнен алырбыҙ, Мәжит илгә барнау ир түгел* (Халыҡ йырынан).

**БАРНИК** [*рус.* парник] *диал.* Сәйгүн.

**БАРО́ГРАФ** [*рус.* 〈 *гр.*] *и.* Атмосфера баҫымының үҙгәрешен үҙе яҙып бара торған прибор.

**БАРО́ККО** [*рус.* 〈 *ит.*] *и.* 16—18 быуаттарҙағы Көнбайыш Европа архитектураһы һәм скульптураһында булған ныҡ биҙәкле стиль.

**БАРО́МЕТР** [*рус.* 〈 *гр.*] *и.* **1.** Атмосфера баҫымын үлсәй торған прибор. *Терегөмөшлө барометр.*

**2.** *күсм.* Эш, хәлдең барышын сағылдырған күрһәткес. *Сауҙа эшен ҡайһы саҡта экономик тормоштоң барометры тип атайҙар.* «Совет Башҡортостаны», 1965, 9 июль.

**БАРО́Н** [*рус.* 〈 *фр.*] *и.* Көнбайыш Европала: графтан түбәнге дворянлыҡ титулы һәм шул титулдағы кеше.

**БАРРИКА́ДА** [*рус.* 〈 *фр.*] *и.* Урам һуғышында: һәр төрлө нәмәнән өйөлгән нығытма. *Баррикада ҡороу.*

**БАРС** *и. ҡар.* **барыс.**

**БАРСА** [1] *билд. а.* Бөтә булған; тотош, һәммә. *Эй даһиҙың һәйкәле, һин барса һәйкәлдән бөйөк.* Х. Ғәбитов.

**БАРСА** [2] [*фарс.*] *и.* **1.** Уҡалы ебәк туҡыма. *Барса күлдәк.*

**2.** *диал.* Туҡымалағы эре биҙәк. *Аҡлы ситса, алма барса иң яратып кейгәнем* (Халыҡ йырынан).

**БАРСАЛАУ** *ҡ. диал. ҡар.* **биҙәкләү** 1.

**БАРСЫН** *и.* Ебәк туҡыма.

**БАРТАН** *с. диал.* Үсексән.

**БАРТАНЛАУ** *ҡ. диал.* Үсегеү.

**БАРХА́Н** [*рус.* 〈 *ҡаҙ.*] *и.* Сүлдә һәм далала үҫемлек менән ныҒытылмаған ташылдыҡ ҡом убаһы.

**БА́РЩИНА** [*рус.*] *и.* Крепостнойлыҡ дәүерендәге крәҫтиәндәрҙең алпауытҡа мәжбүри һәм буш эшләнгән эше.

**БАРЫ** [1] *билд. а.* Һан, күләм йәһәтенән тулылыҡты белдерә; барлыҡ, бөтә, һәммә. *Беҙгә команда булды. Барыбыҙ ҙа, блиндаждан сығып, окоп буйҙарына таралдыҡ.* Д. Юлтый. *Килен төшкәс, уның бөтә алтын-көмөшлө һандыҡтарын, ебәк күлдәктәрен, уҡалы камзулдарын, сафьян ситектәрен, талир тәңкә ҡашмауҙарын — барын да аҡ келәткә тултырҙылар, ти* (Әкиәттән). *Тыуып үҫкән Дим буйҡайы йәнгә яҡын барынан* (Халыҡ йырынан).

◆ **Ни бары** бөтә булғаны, барлығы. *Ҡыш буйына ни бары бер ай эшләгән.*

**БАРЫ** [2] *кис.* Һан, күләм йәһәтенән сикләй; тик. *Колхозсылар эшкә сығырға ашыҡмай, бары Шәрәф Иртөбәков менән бер төркөм йәштәр генә ырҙынға китте.* Б. Бикбай. *Аҡтүбәгә еткәндә кеҫәмдә бары егерме тин аҡса ҡалған ине.* Т. Йәнәби.

**БАРЫБЕР** *р.* **1.** Нисек кенә булмаһын, ни булһа ла. *[Миңлебай:] Мин ҡола бейәне һатам да барыбер өйҙө ҡыйыҡлатам.* Т. Йәнәби. *[Айыуголаҡ — картҡа:] Ҡаптыңмы? Барыбер ҡасып ҡотола алманың* (Әкиәттән).

**2.** Айырмаһы, әһәмиәте юҡ, бер тигеҙ: берҙәй. *Кем булһа ла миңә барыбер.*

**БАРЫЛЫУ** *ҡ. эйһ. ф. ҡар.* **барыу** **1**.— *Өфө тиклем Өфөгә барыла бит, ҡарсыҡ. Әллә ниндәй түрәләр менән күрешеү ихтимал.* Р. Низамов.

**БАРЫМ** *и.* **1.** Ысын теләк; ихласлыҡ. *Ашҡа барымы юҡ. Эшкә барымы юҡ.* ■ *[Сәйет] йомош, юлға етеҙ, эшкә барымлы булған.* Ә. Вахитов.

**2.** *диал.* Ниҙеңдер алға, ыңғайға китеше. *Эш барымһыҙ булып китте.*

**БАРЫМСЫҠ** *и.* Ҡыҙҙың кейәүгә бара торған кешеһе. *Барсын ыргып төшөп: «Барымсыгым ошо минең»,— тип Алпамышага каршы йүгерә.* «Алпамыша».

**БАРЫМТА** *и. тар.* Мал-мөлкәтен, ҡатын-ҡыҙҙы талап алыу өсөн сит ырыуға яһалған һөжүм. *[Сапкын — Ырыҫҡолга:] Ҡарагужа кешеләре барымтага килгән. Бөтә малды кыуып алып киттеләр.* М. Кәрим.

**БАРЫМТАЛ** *с. диал.* Йөрөшлө.

**БАРЫМТАЛАУ** *к. тар.* Барымта яһау.

**БАРЫМТАЛАШЫУ** *к. тар.* Ҡара-ҡаршы барымта яһау.

**БАРЫМТАСЫ** *и. тар.* Барымтала ҡатнашҡан кеше. *Башлыктарын, бер нисә кешеһен югалткан барымтасылар йылкы көтөуен калдырып ҡасырга мәжбүр була.* «Ҡарас менән Аҡша».

**БАРЫН** *и.* Табындарға ингән бер башҡорт ырыуының исеме.

**БАРЫНСА** *р.* Мөмкин тиклем, хәлдән килгәнсә. *Барынса кейендереү.* ■ *Кистән ук әсәһе барынса тырыштырып, Мусакайга ашарга төйнәне, алам-һалам йылы кейем хәстәрләне.* Б. Бикбай.

**БАРЫС** *и.* Бесәй һымаҡтар ғаиләһенә ҡараған ҡара сыбар һары төҫлө эре йыртҡыс һөтимәр йәнлек. *Барыс бейек ҡарлы тауҙарҙа йөрөй.*

◆ **Барыс йылы** ун ике йыллыҡ мөсәлдең өсөнсө йылы.

● *Барыс йылында барын сәс, һис булмаһа тары сәс.* Әйтем.

**БАРЫҪ** *с. диал.* Тулы, йомшаҡ итле. *Барыҫ тәнле.*

**БАРЫУ** *к.* **1.** Бер йүнәлештә хәрәкәт итеү. *Йәйәү барыу. Поезд менән барыу. Шәп барыу.* ■ *Булат .. арбаны этеп барҙы-барҙы ла бер баганага терәлеп туктаны.* М. Тажи. *Пароходтар бара, пристандәр байраҡ болгап оҙатып калалар.* Ғ. Сәләм. *Эй бара, ти, былар, эй бара, ти, эт алдан йүгерә, көтөүсе уның артынан йүгерә, ти. Бара торгас, әлеге урманга барып инделәр, ти* (Әкиәттән).

**2.** Ниндәйҙер маҡсат менән ҡайҙалыр йүнәлеү йәки булыу. *Ауга барыу. Баҙарга барыу.* ■ *Минең ҙур театрга барганым булмаһа ла, циркта булганым бар.* С. Агиш./Тәғәйенләнгән ергә етеү (хат һ. б. нәмәгә ҡарата). *Хат яҙгас, бер аҙ йөрәк баҫыла, күңел тыныслана: бәлки хат барыр, бәлки алып уҡырҙар.* Д. Юлтый./Ниндәйҙер йүнәлештә булыу (һүҙ, уй, ниәт кеүек нәмәгә ҡарата). *Ғәлләметдин шаян Сөләйҙең тел төбө ҡайҙа барганын аңламайыраҡ калды, күрәһең.* Ш. Насыров.

**3.** Дауам итеү, булыу (эш, әңгәмә һ. б. ҡарата). *Ҡыҙыу бәхәс бара. Һүҙ уның тураһында бара.* ■ *Юкка болокһой кеше, ә тормош һаман үҙ юлынан бара бирә.* Б. Бикбай.

**4.** Билдәле бер йәш уҙғарыу. *Ҡыҫыгыраҡ күҙле, өс йәше менән барган малай шым гына тора.* Ә. Вәли.

**5.** Ниндәйҙер ғәмәлдә кисереү; ғәмәлләшеү. *Сауҙа насар бара. Укыу якшы бара.— Тагы бер трактор алып кайттылар, эштәр хәҙер һәйбәт бара.* ■ *[Егет — Алпамышага:] Тиҙерәк кайт, унда бәйге бара, һуңлап калма.* «Алпамыша».

**6.** Кейәүгә сығыу. *[Зәйнәп:] Ғарифтың нисә кыҙ алып айырганын бик якшы беләм. Мин уга үлһәм дә барасагым юк.* М. Ғафури.

**7.** *күсм.* Берәй йүнәлештә үҫеш алыу. *Коммунизмга барыу. Техник прогресс юлынан барыу.*

**8.** *күсм.* Ниндәйҙер эш, ҡылыҡҡа аҙым яһау. *Түбәнлеккә барыу.* ■ *— Үҙ теләге менән ошондай эшкә барыр инеме ни ул?* З. Биишева./Ниндәйҙер сифат, тәбиғәттән сығып эш итеү. *Уҫаллыгыңа бараһың.* ■ *Эй, малай сак, шуклыгыңа барып, сәскәләргә булдың хаяһыҙ.* В. Әхмәҙиев.

**9.** *күсм.* Ярарлыҡ булыу; ярау. *Уҫак балта һабына бармай. [Крәҫтиән:] Ҡустым, былай ҡара әле, бынау нәмә түшәк тышына барырлыҡ түгелме?* С. Агиш.

**10.** Төҫ булыу; килешеү. *Зәңгәр күҙгә зәңгәр күлдәк бик бара.*

**11.** *күсм.* Үтемле булыу; үтеү. *Тамакка аш бармай.*

**12.** Хәл ҡылымдың *-п* формаһында килеп, башҡа ҡылымдар менән ҡушма ҡылымдар яһай. *Барып ҡыҫылыу. Барып кушылыу. Барып тоташыу. Барып ултырыу. Барып һугылыу. Барып әйтеү. Барып етеү. Барып инеү. Барып кайтыу. Барып йөрөү.*

**13.** *-п/-а* формаһындағы хәл ҡылымға ҡушылып, ярҙамлыҡ ҡылым сифатында ҡушма ҡылым яһай: а) эш-хәрәкәттең даимилыҡ мәғәнәһен белдерә. *Китеп барыу. Ҡарап барыу. Йырлап барыу. Газета-журналды укып барыу. Радионан кәрәкле нәмәне тыңлап барыу. Һәр һүҙҙе яҙып барыу;* б) эш-хәрәкәттең нимәгәлер йүнәлеш алыуын белдерә. *Арта барыу. Бөтә барыу. Байый барыу. Ишәйә барыу. Йомшара барыу. Камиллаша барыу. Көсәйә барыу. Үрсей барыу. Аҙык бөтә бара. Көн кисләп бара. Һауыт тулып бара. Ҙурайып барыу. Кеше булып барыу;* в) нимәгәлер тиҙ генә ынтылыуҙы белдерә. *Ярһып барыу. Илап барыу.*

◆ **Алып барыу** илтеү. **Ана бара юлың** *кар.* **ана** [1]. **Барып сығыу** 1) кемгәлер аҙ ваҡытҡа килеү; 2) тормошҡа, бойомға ашыу. *Эш Юламан карт уйлаганса барып сыкмай.* З. Биишева. **Ҡул барыу** *кар.* **ҡул** [1]. **Уҙа барһа** күп булһа, күп тигәндә. *Станция менән посёлка араһы уҙа барһа бер километр булыр.* Ж. Кейекбаев.

**БАРЫҺЫ** *билд. а.* Һан, күләм йәһәтенән тулылыҡты белдерә; бар булғаны, бөтә булғаны, барыһы. *Тауыш бөтә кешене һиҫкәндерҙе. Барыһы ла .. тәҙрәгә караны.* С. Агиш. *Һүҙҙәреңдең барыһы ла ялган, берәһе ысын һүҙ түгел.* Ш. Бабич.

**БАРЫШ** *и.* **1.** Бер йүнәлеш буйынса булған хәрәкәт. *Аттың барышы менән .. Аҡназар калгып, һуңгарак ойоп китте.* Ғ. Дәүләтшин.

**2.** Бер нәмәнең үҫеше, дауам ителеше. *Вакигалар барышы. Эш барышы. Сәсеүгә әҙерлек барышы.*

**БАРЫШЛАЙ** *р.* Барған ыңғайҙа. *Китеп барышлай. Үтеп барышлай.* ■ *Гәрәй .. капканан сыгып барышлай аңгармаҫтан башын арҡыры агаска бәреп алды.* Б. Бикбай.

**БАРЫШЫУ** *к.* Бер-береңә барыу. *Улар [Күсәр менән Күсмәҫ] икеһе бик дуҫ булып, кунакка*

*барышыр, .. һунарға йөрөшөр булған, ти* (Әкиәттән).

**БАРЬЕ́Р** [*рус.* ⟨*фр.*] *и.* **1.** Спортта, циркта ырғып сығыу өсөн ҡуйылған кәртә.

**2.** Эш урынын бүлеп торған тәпәшәк кәртәләү. *Мин үлсәгән тауарҙарҙы контролёрға, барьер артындағы кешегә, илтә торам.* С. Агиш.

**3.** *күсм.* Ниндәйҙер ҡаршылыҡ. *Төрлө барьерҙар эшкә ҡамасаулай.*

**БАС** [*рус.* ⟨*ит.*] *и.* **1.** Иң ҡалын ирҙәр тауышы. *Ҡарттың буйы оҙон, кәүҙәһе ҡалын, .. тауышы ҡалын. Ысын бас. Күкрәп тора.* Ҡ. Даян./Шул тауыш менән йырлаған кеше.

**2.** Түбән регистрҙағы ҡыллы йәки тынлы музыка ҡоралы.

**БАСА** *и.* **1.** Төлкө, һыуһар кеүек йәнлектең сираҡ тиреһе.

**2.** Ҡатын-ҡыҙҙың шул тиренән тегелгән тышлы туны.//*Баса тун.*

● *Ҡыҙы барҙың наҙы бар, баса күрпәһе лә бар.* Мәҡәл.

**БАСКЕТБО́Л** [*рус.* ⟨*ингл.*] *и.* Ике команда ярышып, ике яҡ бағаналағы сеткалы кәрзиндәргә туп ырғытыша торған спорт уйыны. *Баскетбол ярышы. Баскетбол уйнау.*

**БАСКЕТБОЛСЫ** *и.* Баскетбол уйнаған кеше.

**БАСҠАҠ** *и. тар.* Бойондороҡло ил халҡынан яһаҡ йыйыусылар башлығы.

**БА́СНЯ** [*рус.*] *и. кар.* **мәҫәл.**

**БАССЕ́ЙН** [*рус.* ⟨*фр.*] *и.* **1.** Йөҙөү, һыу инеү өсөн йәки төрлө һынау үткәреү өсөн хеҙмәт иткән махсус яһалма күл. *Ҡышҡы йөҙөү бассейны.*/Шундай яһалма күле булған ҡоролма.

**2.** Йылға һәм уның ҡушылдыҡтары биләгән майҙан. *Ағиҙел йылғаһының бассейны.*

**3.** Билдәле бер ҡаҙылма байлыҡтар ятҡан өлкә. *Күмер бассейны.*

**БАСТИО́Н** [*рус.* ⟨*фр.*] *и.* Биш мөйөшләп эшләнгән хәрби нығытма.

**БАСТРУК** [*рус.* острог] *и. иҫк.* Төрмә. *Юлай ҙа улы батыр Салауат баструкта ултыра — өйҙә юҡ* (Халыҡ йырыиан).

**БАҪА** *и.* **1.** Яҡшы сүс бирә торған нәҙек һабаҡлы ата киндер. *Баҫа йолҡоу. Баҫа талҡыу.*

**2.** Шул үҫемлектән алынған сүс. *Баҫа еп. Баҫа күлдәк.* ■ *Түңәрәккәй күлгә баҫа һалдым, булғандыр инде баҫаһы, инәкәй. Баҫаларын иләп һуға алмам, һыулауыңдан инде һыу алмам* (Сеңләүҙән).

**БАҪАЛҠА** *и.* Тыныс, һалҡын тәбиғәт, ҡылыҡ, характер. *Баҫалҡаһы булмаһа, батыр яуҙа еңә алмай* (Ҡобайырҙан).

**БАҪАЛҠАЛЫ** *с.* Тыныс, һалҡын тәбиғәтле; баҫалҡы. *Баҫалҡалы кеше.*

**БАҪАЛҠЫ** *с.* Тыныс, һалҡын тәбиғәтле, тыйнаҡ; баҫалҡалы. *Баҫалҡы кеше.* ■ *Килгән врач бик һәйбәт булырға оҡшаған. Баҫалҡы ғына холоҡло.* Ш. Янбаев.

**БАҪАЛҠЫЛАНЫУ** *к.* Баҫалҡыға әйләнеү.

**БАҪҠЫН** *и.* Баҫып алыу, талау ниәте менән яһаған ҡоралды һөжүм. *Баҫҡын яһау.*

**БАҪҠЫНСЫ** *и.* Баҫҡында ҡатнашыусы, баҫып алыусы. *13 быуатта Башҡортостан татар-монгол баҫҡынсыларының хөкүменә дусар була.* М. Сәғитов.

**БАҪҠЫС** *и.* **1.** Менеү, төшөү өсөн араталы йәки киртләсле итеп эшләнгән ҡоролма. *Яр баҫҡысы.* ■ *Ҡырлап эшләнгән тимер баҫҡыстан .. менеп киттек.* С. Агиш. *Баҫҡыстарҙың була төрлөһө. Өй янында тора береһе. Ул күтәрә һине ҡыйыҡҡа.* Х. Түләкәев.

**2.** *күсм.* Ниҙеңдер үҫешендәге билдәле бер кимәл. *Культураның түбән баҫҡысында кешеләр тәбиғәт күренештәренә буйһонорға .. мәжбүр булһа, фән-техника үҫеү менән .. тәбиғәттең үҙен ныҡ файҙалана башлай.* Ғ. Амантай.

**3.** *күсм.* Ниҙеңдер ҡоролош тәртибендәге бер кимәл. *Беренсе баҫҡыс мәктәп.*

**4.** *күсм.* Музыкалағы тауыш рәтенең, гамманың бер өнө. *Ҡурайҙа етенсе баҫҡыс тауыш [си] бар икәнен иҫбат иттеләр.* Ғ. Бирҙин.

**БАҪҠЫСЛАНЫУ** *к. төш. кар.* **баҫҡыслау** 1. *Баҫҡысланған күтәрмә.*

**БАҪҠЫСЛАУ** *к.* **1.** Баҫҡыслы (1 мәғ.) итеү. *Такта аласыҡ бейек итеп эшләнгән, ишеге баҫҡыслап ҡуйылған.*

**2.** Баҫҡыс-баҫҡыс итеү. *Бура ауыҙында — ҙур ғына таш. Ул баҫҡыслап эшләнгән.* Ә. Вахитов.

**БАҪЛЫҒЫУ** (баҫлыҡ*ғ*) *к.* Йоҡлағанда тын ҡыҫылыу. *Биксән ағай .. торам тине — тора алманы. Өндәшергә итте — һүҙен әйтә алманы. Ул баҫлығып ятҡанын аңлай, уяна алмай ине.* Р. Солтангәрәев.

**БАҪЛЫҠТЫРЫУ** *к.* **1.** *йөкм. кар.* **баҫлығыу.** *Баҫлыҡтыра торған әллә ниндәй яман төштәр күрәм.*

**2.** *эйһ. ф. кар.* **баҫлығыу.** *Йоҡоға китһәм, баҫлыҡтыра.*

**БАҪМА** [1] *и.* **1.** Йылға, соҡор аша йәйәүле кеше өсөн эшләнгән тар ҡоролма. *Баҫманан сығыу.* ■ *Һыу арҡыры баҫма һалдым тал-тирәктәр буйынан* (Халыҡ йырынан)./Кеше юлына буйлатып һалынған таҡта. *Тротуар урынына ике яҡлап таҡтанан баҫма һалынған.* Я. Вәлиев.

**2.** Һыу ситенә кер сайҡау, кәмә туҡтау һ. б. өсөн бейек итеп ағастан эшләнгән майҙансыҡ. *Баҫмаларға баҫып һыуҙар алдың сылтырап та аҡҡан һауҙарҙан* (Халыҡ йырынан).

**3.** Төҙөлөш эше өсөн стена буйлатып таҡтанан эшләнгән һикәлтә. *Бишенсе цех. Ундағы яңы төҙөлгән установкаларҙан төҙөлөш баҫмалары ла алынып бөтмәгән.* «Совет Башҡортостаны», 1984, 30 апрель.

**БАҪМА** [2] I *с.* Типографик ысул менән яҙылған; ташҡа баҫҡан. *Баҫма хәреф.* **Баҫма табаҡ** китаптың күләмен үлсәү берәмеге.

II *и.* Нәшриәттән сыҡҡан әҫәр. *Академик баҫма. Китаптың икенсе баҫмаһы. Әҙәби баҫма.*

**БАҪМА** [3] *и. тар.* Татар-монгол иҙгенлеге дәүерендә урҙа ханының һүрәте баҫылып, ышаныс билдәһе булып йөрөгән металл пластинка йәки мисәт.

**БАҪМА** [4] *и.* Еп үлсәү берәмеге (утыҙ һабаҡтан тора). *Ҡоҙағыйҙың күлдәгенә һигеҙ баҫма еп киткән* (Туй йырынан).

◆ **Баҫма(лы) еп** ун әйтемдән (терһәккә йәки тубыҡҡа 30—40 урауҙан) торған аяҡлы еп. *Әсәһе [Нәфисәгә] бер баҫма еп менән ике бишәр тинлек баҡыр аҡса бирҙе.* И. Көҫәпҡол.

**БАҪМА**[6] *и.* Үҫемлектән алынған ҡара сәс буяуы. *Сәс буяу өсөн иң һәйбәте — ҡына менән баҫма.* «Совет Башҡортостаны», 1965, 11 декабрь.

**БАҪМА**[6]: **баҫма сыбар** *ҡар.* **сыбар.**

**БАҪМАҠ**[1] *и.* **1.** Музыка ҡоралының бармаҡ менән баҫып тауыш сығара торған пластинкаһы. *Рояль баҫмағы.* ■ *Гармунсы етеҙ бармаҡтары менән .. гармунының баҫмаҡтарын барлап сыҡты.* К. Мәргән.

**2.** Төрлө механизмдың (яҙыу машинкаһының, телефон аппаратының һ. б.) бармаҡ менән баҫып эшләтә торған рычаг башы. *Приёмниктың баҫмағына баҫыу. Яҙыу машинкаһының баҫмағы.*

**БАҪМАҠ**[2] *и. диал. ҡар.* **баҫма**[1] 1.

**БАҪМАҠЛАУ** *ҡ.* **1.** Кешенең теңкәһенә тейеп, йыш-йыш килеү.

**2.** *диал. ҡар.* **баҫмалатыу**[3] 1. *Ҡасып барған аҡтарҙы баҫмаҡлап, ауылға ҡыҙылдар килеп инде.* Н. Мусин.

**БАҪМАЛАТЫУ**[1] *ҡ. йөкм. ҡар.* **баҫмалау**[1].

**БАҪМАЛАТЫУ**[2] *ҡ. йөкм. ҡар.* **баҫмалау**[2].

**БАҪМАЛАТЫУ**[3] *ҡ.* **1.** Арттан ҡалмай ҡыҫырыҡлау. *Вәлиҙәр атҡа менеп бер ҙә китә алмаған, Ҡушайҙар баҫмалатып ҡыуып еткән дә быларҙы уратып алған.* «Башҡортостан ҡыҙы», 1968, № 9.

**2.** *диал.* Ваҫымсаҡлау.

● *Баҫымсаҡты баҫмалатҡан күп булыр.* Мәҡәл.

**БАҪМАЛАУ**[1] *ҡ.* Епте баҫмаға һалыу. *Баҫмалап ҡуйыу.*

**БАҪМАЛАУ**[2] *ҡ.* Туҡымаға биҙәк баҫыу.

**БАҪМАСЫ** *и.* Урта Азияла совет власына ҡаршы һуғышҡан контрреволюцион милләтсе бандала ҡатнашыусы.

**БАҪМАХАНА** *и. иҫк.* Типография.

**БАҪТЫРҒЫС** *и. диал.* **1.** Түбәсәй.

**2.** Салғы шынаһы.

**БАҪТЫРЫҠ** *и. диал.* **1.** Башағас.

**2.** *ҡар.* **баҫырау** 1.

**БАҪТЫРЫҠЛАУ**[1] *ҡ.* Тегеләй-былай ҡыуып баҫтырыу. *Һыйырҙы баҫтырыҡлап ҡыуыу.*

**БАҪТЫРЫҠЛАУ**[2] *ҡ. диал.* **1.** Башағаслау.

**2.** Баҫыраулау.

**БАҪТЫРЫЛЫУ** *ҡ. төш. ҡар.* **баҫтырыу**[1].

**БАҪТЫРЫУ**[1] *ҡ.* **1.** *йөкм. ҡар.* **баҫыу**[1] 1—8, 10, 11. *Китап баҫтырыу. Мисәт баҫтырыу.*

**2.** Аяҡ өҫтө ҡуйыу, аяҡ үрә торғоҙоу. *Ергә баҫтырыу. Мендереп баҫтырыу.* ■ *Ул (Хафиз карт) Булатты арбаның артына баҫтырып, ике ҡуллап тотондорҙо ла арбаны аҡрын ғына алға этәрҙе.* М. Тажи./Тоҡлы нәмәне тояғына, оҙонса һәм башҡа нәмәне вертикаль хәлгә ҡуйыу. *Бағананы баҫтырып ҡуйыу. Көлтәләрҙе баҫтырып ҡуйыу.*

**3.** Ниндәйҙер бер урынға ҡуйыу; урынлаштырыу. *Сиратҡа баҫтырыу. Станок янына баҫтырыу.*

**4.** Көс, ҡорал ярҙамында туҡтатыу (күмәк хәрәкәтте). *Боланы баҫтырыу. Сыуалышты баҫтырыу.*

♦ **Аяҡ баҫтырыу** *ҡар.* **аяҡ**[1]. **Ҡойроҡҡа баҫтырыу** *ҡар.* **ҡойроҡ.**

**БАҪТЫРЫУ**[2] *ҡ.* Арттан ҡыуыу. *Баҫтырып барыу. Баҫтырып тотоу.* ■ *Аҡ ҡуянҡайҙарҙы ай ҡасырҙым, аҡбуҙ атҡай менән баҫтырҙым* (Халыҡ йырынан].

**БАҪТЫРЫШЫУ** *ҡ. урт. ҡар.* **баҫтырыу**[2]. *Баҫтырышып уйнау.*

**БАҪЫҠ** *с. диал.* Баҫалҡы.

**БАҪЫЛЫУ** *ҡ.* **1.** *төш. ҡар.* **баҫыу**[1] 1, 2, 4, 5, 7—10, 12, 14, 15. *Баҫылған китап. Баҫылған ҡар.*

**2.** Осоп, туҙып тормаҫлыҡ хәлгә килеү. *Саң баҫылды.*

**3.** Ниҙеңдер көс, хәрәкәте кәмеү, әҙәйеү. *Атыш баҫылды. Асыу баҫылды. Тауыш баҫылды. Һуғыш баҫылды. Һыҙлау баҫылды. Дауыл баҫылды. Ел баҫылды. Ямғыр баҫылды.* ■ *Кейенгәс, тән йылынғандай булды. Ҡолаҡтың шаулауы баҫылды.* Д. Юлтый. *Кисә башланған буран .. бәләкәй генә баҫылғандай итеп торҙо ла тағы ҡотороп китте.* Ә. Вәли.

**4.** Тыныс хәлгә килеү; тынысланыу. *Күңел баҫылды.* ■ *Ауыл эттәре сыусып, бер нисә минут ләңкелдәне лә баҫылды.* Т. Хәйбуллин. *Буранбай ҙа һөргөн китеү менән баҫылыр микән ауыл ирҙәре* (Халыҡ йырынан).

**5.** *диал. ҡар.* **ауырайыу** 2. *Баҫылып торам, ямғыр яуыр, ахыры.*

**БАҪЫМ**[1] *и.* **1.** Газ һәм шыйыҡлыҡтың баҫыу һәм ян-яҡҡа этеү көсө. *Атмосфера баҫымы. Газ баҫымы. Һауа баҫымы. Һыу баҫымы.*

**2.** *лингв.* Һүҙҙәге бер ижектең тауыш менән айырылыуы һәм шулай уҡ шундай айырылыуҙы күрһәтеп, хәреф өҫтөнә ҡуйылған билдә. *Баҫым ҡуйыу.*/Логик әһәмиәтлеген айырып әйтеү маҡсатында һөйләмдәге бер һүҙҙең тауыш көсө менән айырылыуы. *Ритмик баҫым. Фраза баҫымы.* ■ *— Бында бер генә Мәхмүтов. Ул ошо егет инде,— тине Ғәйшә «егет» һүҙенә баҫым яһап, мине күрһәтте.* С. Агиш.

**3.** *күсм.* Кешенең көсөн, ихтыярын баҫыу өсөн яһалған тышҡы тәьҫир; ҡыҫым. *Баҫым яһау.* ■ *Аҡтыҡҡы һулышына тиклем һуғыша [Йәрмәт], ахырҙа күмәк көстөң баҫымы аҫтында ҡарыуы ҡайтып ергә йығыла* (Хикәйәттән).

♦ **Ҡан баҫымы** ҡан тамырҙары стенаһына ҡабырғанан яһалған баҫым.

**БАҪЫМ**[2] *с.* Бер һалып йәки өйөп баҫҡан күләм. *Бер баҫым балсыҡ.* ■ *Атайым, Дәүләтгәрәйҙең атаһына ике баҫым тиҙәк һуғырға булып, миңә ҡыҙыл бәҙдән бишмәт тектерҙе.* Ғ. Ғүмәр.

**БАҪЫМСАҠ**[1] *с.* Кеше алдында өнһөҙ, ҡыйыуһыҙ; йыуаш. *Күрә алмайҙар мине бында, баҫымсаҡ итеп алдылар. Бала-сағаһына тиклем көлә.* З. Хисмәтуллин.

● *Баҫымсаҡты баҫалар.* Әйтем. *Баҫымсаҡҡа баҡа ла айғыр.* Мәҡәл.

**БАҪЫМСАҠ**[2] *и. диал.* Һурнаҡ.

**БАҪЫМСАҠЛАУ** *ҡ.* Баҫымсаҡ[1] итеп ҡыйырһытыу, ситләтеү.

**БАҪЫМТА** *и.* Барымтаға яуап итеп яһалған сапҡын; ҡарымта. *Ирмен тигән ир кеше .. барымтаға баҫымтаны төбөн белмәй башламаҫ* (Ҡобайырҙан).

**БАҪЫНҠЫ** *с.* **1.** Шау-шыуһыҙ, ҡысҡырыуһыҙ; әкрен; *киреһе* күтәренке. *Баҫынҡы тауыш.*

**2.** *диал. кар.* **баҫымсаҡ** [1]. *Баҫынҡыны тапалап китергә йөрөүселәр күп була ул.* Һ. Дәүләтшина.

**3.** *диал.* Баҫалҡы. *Ул [Ләйлә] баҫынҡы ғына ине: әйткән һүҙҙәремде тыңлап тора, белмәгән урындары булһа, белергә тырыша.* М. Ғафури.

**БАҪЫРАУ** *и.* **1.** Бесән, һалам йөгөн өҫтән баҫтырып тарттыра торған һайғау. *[Фатих] тейәгән бесәнен баҫырау менән ҡыҫып тартты ла, туҡын йөк өҫтөнә ырғытып, күк бейәне етәкләп, оло юлға китте.* Б. Ишемғол.

**2.** *диал. кар.* **урҙа** [1] 1.

**БАҪЫРАУЛАУ** *к.* Баҫырау менән баҫтырып ныҡытыу. *Беренсе йөктө тейәп баҫырауланыҡ.* Ғ. Шәрипов.

**БАҪЫРМА** *и. диал.* Башаҡас.

**БАҪЫРЫЛЫУ** *к. төш. кар.* **баҫырыу.**

**БАҪЫРЫУ** *к.* **1.** Өйөп, өҫтән ауыр нәмә менән баҫтырыу. *Япраҡ баҫырыу. Силос баҫырыу.*

**2.** Өҫтән ныҡ итеп ҡаплау. *Бешкән бәрәңгене баҫырып ултыртыу. Юрған ябып, баҫырып һалыу.*/Ныҡ итеп баҫа төшөрөү. *Башыңа ла кейгән ай бүркеңде баҫыра ла кейһәң, тирләтер* (Халыҡ йырынан).

**3.** Күҙҙән йәшереп, өҫтән ҡаплау. *Әхмәт йөрөгән ҡара урмандарҙа япраҡ менән баҫырып әҙҙәрен.* Ғ. Сәләм./*күсм.* Кешенән йәшереп, өндәшмәй үткәреү. *Ғәйепте баҫырыу.* ■ *[Әсмәбикә:] малайығыҙ бик зирәк, һәләтле музыкант сығыуы ихтимал. Баҫырып ҡалдыра күрмәгеҙ.* Ф. Исәнғолов.

**БАҪЫУ** [1] *к.* **1.** Аяҡты ҡуйыу. *Ергә баҫыу. Өҙәңгегә баҫыу. Тупһаға баҫыу.* ■ *Баҫҡыстың иң үрҙәгеһенә аяҡты баҫып, инергәме-юҡмы, тип уйлап торҙом.* С. Агиш./Аяҡ үрә тороу. *Баҫып ҡалыу. Баҫып ҡарау. Менеп баҫыу. Сығып баҫыу.* ■ *[Алпамыша] һикереп тороп баҫҡайны, ти, аяғындағы бығауы өҙөлөп китте, ти.* «Алпамыша». *Аҙнагол ҡоласын киң йәйеп, кәмәлә .. баҫып килә.* З. Биишева.

**2.** Аяҡ атлау, барыу. *Аҡрын баҫыу. Алпан-толпан баҫыу. Арҡыры баҫыу. Аяҡ ослап баҫыу. Ваҡ-ваҡ баҫыу. Йәһәт баҫыу. Ҡупшы баҫыу. Лап-лоп баҫыу.* ■ *Урал арҡаһынан уя баҫып, елә-саба киткән малдарым* (Халыҡ йырынан)./*күсм.* Эш-хәлгә аҙым яһау. *Революция юлына баҫыу. Тормош юлына баҫыу.*/*күсм.* Күпмелер йәшкә инеү. *Яхин быйыл утыҙға баҫҡан егет.* Н. Мусин.

**3.** Кешене бейергә саҡырғанда алдына килеп аяҡ тыпырлатыу. *Бына ҡарсығына баҫа тигәндә, баҫты бит был ҡартлас йәш кенә бер сибәргә.* Р. Сафин./Бейеү. *Әйҙә баҫайыҡ әле, эшебеҙҙе алдан бөттөк, күңел асайыҡ әле* (Халыҡ йырынан).

**4.** Берәй эшкә керешеү, ниҙелер башҡара башлау. *Ҡарауылға баҫыу. Һаҡҡа баҫыу. Станок янына баҫыу.* ■ *Молотилка эшкә башланы, барабан алдына бригадир Яҡуп үҙе баҫты.* Б. Бикбай.

**5.** Күпмелер күләм, һанға етеү.— *Арыш быйыл, гектар башына һалғанда, нисә ботҡа баҫыр икән?* М. Тажи.

**6.** Өҫтән көс төшөрөү, ауырлыҡ һалыу. *Баҫмаҡҡа баҫыу. Күреккә баҫыу.* ■ *Әсәһе әҫе ҡурмасты услап алып бирмәксе булғайны Ҡуҙыйкүрпәс уның усына ҡуша баҫты.* «Ҡуҙыйкүрпәс менән Маянһылыу»./Өҫтән ауыр булып ятыу. *Ауыр кейем елкәне баҫа.* ■ *Ауырая тән, һәр минутта ауырая, ныҡ баҫа албаҫтылы епшек һауа.* Ш. Бабич./*күсм.* Ауыр, дарманһыҙ хәлгә килтереү; киңгәтеү. *Етемлек баҫты. Донъя баҫты. Ҡайғы-хәсрәт баҫты. Ҡартлыҡ баҫты.*

**7.** Ауырлыҡ менән аҫҡа еңеү. *Үлсәүҙең бер табағы баҫты.*/Түбәнгә эйеү, төшөрөү. *Хужа башын баҫып, аптырап, уйға ҡалып ултырҙы.* Ш. Насыров. *Ҡыҙҙар, күрәһең, атаһынан ҡурҡа, тиҙ генә күҙҙәрен түбән баҫып сыҡтылар.* Д. Юлтый./Ныҡ аҫҡа төшөрөү; сумырыу (баш кейемен). *Бүректе баҫып кейеү.*

**8.** Осоп, туҙып тормаҫлыҡ хәлгә килтереү. *Юл саңдарын баҫып ямғыр үтте.* С. Әлибаев./Аҫҡа төшөрөп кәметеү. *Шәмде баҫыу.*/Тыныс хәлгә килтереү; тынысландырыу. *Күңелде баҫыу. Йөрәкте баҫыу.*

**9.** Өҫтән һалыу. *Тәнгә йылы баҫыу.* ■ *Юлия .. яраға йода һөртә, мамыҡ баҫа.* Һ. Дәүләтшина. *[Рәшиҙә] усы менән маңлайын баҫып ҡараны.* М. Тажи./Өҫтән ҡуйып, һүрәт, яҙма төшөрөү. *Мисәт баҫыу.* ■ *Егет балдаҡты ҡамырға баҫа. Балдаҡта ҡыҙҙың исеме яҙылған була. Исем ҡамырға сыға* (Әкиәттән).

**10.** Өҫтән һалып тегеү, тағыу. *Таҫма баҫыу. Төймә баҫыу.*

**11.** Өҫтән ҡаплау. *Ус менән баҫыу. Самауырҙы баҫыу.* ■ *Байғужа минең ауыҙҙы баҫты, беләктән ҡыҫып тотто.* Д. Юлтый./*күсм.* *Кешенән йәшереп, белгертмәй үткәреү. Ғәйепте баҫып ҡалдырыу.*

**12.** Түшәлеп, йәйелеп ҡаплау. *Көрт баҫыу. Һыу баҫыу.* ■ *Өс көн, өс төн яуған ҡар. Кәртәҡураны, тирмәне баҫып киткән* (Әкиәттән)./Таралып өҫтән ҡаплау. *Йөҙҙө һары һыу баҫыу. Һаҡал-мыйыҡ баҫыу. Күҙҙе ҡан баҫыу.* ■ *Хәҙер утарҙың әҙе-юлы юҡ, .. тик кесерткән, үлән баҫҡан нигеҙ урындары ғына тора.* Ә. Вахитов.

**13.** Тотош солғап томалау. *Томан баҫыу. Төтөн баҫыу.* ■ *Йәсиғ уҙған, төн уртаһы яҡынлашҡан; тирә-яҡты ҡараңғылыҡ тамам баҫҡан.* Ш. Бабич./*күсм.* Тотош биләү. *Өй эсен тынлыҡ баҫа. Йөрәкте моң баҫа. Ҡайғы баҫа.* ■ *Салауат та бахыр илдән киткәс, йөрәктәрҙе баҫты зарһағыш* (Халыҡ йырынан). **Баҫып яуыу** тотош ҡаплап яуыу (ямғырға ҡарата).

**14.** Бала сығарыу өсөн йомортҡа өҫтөндә ултырыу (ҡошҡа ҡарата). **Оя баҫыу** йомортҡа баҫыр өсөн ояға ултырыу.

**15.** Игенде башаҡтан төшөрөү; һуғыу. *Арыш баҫыу. Борсаҡ баҫыу. Тары баҫыу.*

**16.** Иҙеп йомшартыу. *Балсыҡ баҫыу. Ҡорот баҫыу. Туҡмас баҫыу.* ■ *Ҡамыр баҫҡан ҡоҙағыйҙың ҡулы йәбешә микән?* (Туй йырынан).

**17.** Әүәләп ойоштороу; кейеҙләндереү. *Быйма баҫыу. Кейеҙ баҫыу. Тула баҫыу.*

**18.** Ниҙеңдер көс, тәьҫирен кәметеү. *Асыуҙы баҫыу. Ҡайғыны баҫыу. Тауышты баҫыу. Һағышты баҫыу. Һыҙлауҙы баҫыу. Һыуһынды баҫыу. Шау-шыуҙы баҫыу.*

**19.** Машинанан ҡағыҙға һүрәт, яҙма төшөрөү. *Типографияла баҫыу. Машинкала баҫыу.*

**20.** Махсус йәйланмалар, машиналар ярҙамында типографик наборҙан, клишенан оттиск алып, нәмәгәлер ниндәйҙер тамғалар, хәрефтәр, цифрҙар, рәсемдәр һ. б. төшөрөү. *Газета баҫыу. Нота баҫыу. Плакат баҫыу. Обойға һүрәт баҫыу.* /Нәшриәт, матбуғаттан сығарыу. *Китап баҫыу. Журналда хикәйә баҫыу.* **Ташҡа баҫыу** типографик ысул менән баҫыу.

**21.** Көс, ҡорал менән туҡтатыу. *Боланы баҫыу. Сыуалышты баҫыу.* ■ *Аҡ ҡаҙаҡ отрядтары бер талай теңкәгә тейә торғайны. Уларҙы баҫтылар.* һ. Дәүләтшина.

**22.** Ябырылып һөжүм итеү. *Илде яу баҫты.* ■ *Төлкөбай фронттың уң яғынан үтеп, дошманды ҡабырғанан барып баҫты, ти* (Әкиәттән)./Күмәк булып тулыу. *Өйҙө кеше баҫты.* ■ *Һыйыр-башмаҡ мөңрәп, йортоң баҫһын киләнсәк* (Туй йырынан).

**23.** Хәл ҡылымдың *-а* формаһында килеп, ныҡ көс төшөрөү мәғәнәһендә эш-хәрәкәттең рәүешен белдерә. *Баҫа кейеү.* ■ *[Тай] ҡонан түгел, дүнәнгә әйләнгәс тә баҫа егерлек ат булмай бит әле.* З. Биишева.

♦ **Аяҡ баҫыу** *ҡар.* **аяҡ** [1]. **Аяҡҡа баҫыу** *ҡар.* **аяҡ** [1]. **Баҫып алыу** көслөк менән алыу. **Баҫып инеү** көслөк менән инеү. **Бауыр баҫыу** *ҡар.* **бауыр. Башты баҫыу** *ҡар.* **баш. Йоҡо баҫыу** *ҡар.* **йоҡо** [1]. **Ҡараға** (*йәки* **ҡара ергә**) **баҫыу** ҡар асылып, ҡара ергә сығыу. *Мал ҡараға баҫты.* **Ҡойроҡҡа баҫыу** *ҡар.* **ҡойроҡ. Мисәт баҫыу** *ҡар.* **мисәт. Саң баҫыу** *ҡар.* **саң** [1]. **Сафҡа баҫыу** *ҡар.* **саф** [2]. **Тел-теш баҫыу** *ҡар.* **тел-теш. Юл баҫыу** *ҡар.* **юл** [1]. **Юлға баҫыу** *ҡар.* **юл** [1].

● *Йыуаш булһаң, баҫырҙар, уҫал булһаң, аҫырҙар.* Мәҡәл.

**БАҪЫУ** [2] *и.* **1.** Ашлыҡ сәскән ер. *Арыш баҫыуы. Кукуруз баҫыуы. Ужым баҫыуы. Баҫыу юлы. Баҫыу ҡәртәһе. Баҫыу ҡапҡаһы.* ■ *Ғәйни ағай менән Хәсби апай, бәләкәс туры бейәне егеп, дуға бейеклеге булып елберләп үҫкән ашлыҡ араһынан киң баҫыуға ҡарап йүнәлде.* Т. Йәнәби.

**2.** *диал.* Ҡәртәләп алған сабынлыҡ.

♦ **Баҫыу тотоу** баҫыуҙы ҡәртәләү.

**БАҪЫУСЫЛЫҠ** *и.* Ауыл хужалығының баҫыу эше менән шөғөлләнгән тармағы. *Баҫыусылыҡ бригадаһы.*

**БАТА** [*ғәр.*] *и. иҫк.* Фатиха. *Бата биреү.*/Никах йәше етмәгән ҡыҙҙы биргәндә ата-әсәнән алынған фатиха. *Бата уҡытыу.* **Бата теләк** никахлағанда һәм оҙатҡанда ҡыҙға ҡарап әйтелә торған өгөт.

● *Атаһы башҡаның батаһы башҡа.* Мәҡәл.

**БАТАЛИ́СТ** [*рус.* ⟨*фр.*] *и.* Һуғыш күренештәрен төшөргән художник.

**БАТАЛЬО́Н** [*рус.* ⟨*фр.*] *и.* Бер нисә ротанан торған ғәскәри берәмек. *Батальон командиры.* ■ *Бер нисә көндән һуң, полкка яңы көс — марштағы батальондар килеүен хәбәр иттеләр.* Б. Дим. *Батальонды роталап, взводлап яткырҙылар, торғоҙҙолар, йыйҙылар.* А. Таһиров.

**БАТАРЕ́Я** [*рус.* ⟨*фр.*] *и.* **1.** Бер нисә орудиенан торған ғәскәри берәмек. *Зенит батареяһы. Миномёт батареяһы.*

**2.** Бергә хәрәкәтләнеү өсөн бер нисә типлы приборҙың, аппарат ҡоролманың бөтөн бер системаға йәки установкаға тоташтырылыуы. *Электр батареяһы. Кокс батареяһы.*

**3.** Бер иштән бер нисә өлөш ялғанған ҡоролма. *Йылылыҡ батареяһы.*

**БАТИСКА́Ф** [*рус.* ⟨*гр.*] *и.* Тәрән һыу аҫтына төшөп, тикшеренеү эше алып барыу өсөн махсус рәүештә йыһазландырылған үҙе йөрөмәле камера.

**БАТИ́СТ** [*рус.* ⟨*фр.*] *и.* Бик йоҡа нәфис мамыҡ йәки етен туҡыма.//*Батист күлдәк.* ■ *Сәхибә .. тегеү машинаһы менән батист яулыҡтың ситен бөк[тө].* Ғ. Хәйри.

**БАТИСФЕ́РА** [*рус.* ⟨*гр.*] *и.* Тәрән һыу аҫтына төшөп, тикшеренеү эше алып барыу өсөн махсус рәүештә йыһазландырылған йомро ҡорос камера.

**БАТҠАҠ** *и.* **1.** Һыуға ебеп, иҙелеп ятҡан балсыҡ, тупраҡ. *Батҡаҡҡа батыу.*//*Батҡаҡ ер. Батҡаҡ урын.* ■ *Көндөҙ ҡарлы ҡатыш ямғыр яуа, кис менән һыуыҡ төшкәс, ер туңа, батҡаҡты ла туңдыра.* Д. Юлтый.

**2.** *диал. ҡар.* **бысраҡ** I 2.

**БАТҠАҠЛАНЫУ** *ҡ.* **1.** Батҡаҡҡа әйләнеү. *Батҡаҡланған юл.*

**2.** *диал.* Бысрау. *Аяҡ кейеме батҡаҡланған.*

**БАТҠАҠЛАУ** *ҡ.* **1.** Батҡаҡҡа әйләндереү. *Ҡойоп яуған ямғыр юлды батҡаҡланы.*

**2.** *диал. ҡар.* **бысратыу** 2.

**БАТҠАҠЛЫ** *с.* Батҡағы булған, батҡаҡҡа әйләнгән. *Батҡаҡлы ер.*

**БАТҠАҠЛЫҠ** *и.* Батҡаҡ ер. *Ҡараңғы төн, аяҡ аҫтындағы батҡаҡлыҡ, һәр минут көтөлгән үлем ҡурҡыныстары беҙҙең күкрәктәрҙе тағы ла ҡыҫа, һулыштарҙы быуа.* Д. Юлтый.

**БАТҠЫЛ** *с.* **1.** Бата торған. *Миңнезаданың тракторы йөрөй булһа кәрәк. Эйе! Мотор элеккесә һәр саҡ тигеҙ эшләмәй. Батҡыл урындарҙа бар көсөнә тарта.* М. Хәйҙәров./*и. мәғ.* Бата торған ер. *[Шофёр], машинаһын ҡыҙҙыра төшөп беҙҙән алда елдереп китеп, бер батҡылға барып төкәлгән алдағы газикты ҡыуып етте.* Р. Ғарипов.

**2.** *диал.* Батынҡы.

**БАТМАН** *и.* **1.** Тәпәндән бейегерәк ағас һауыт. *Май батманы.* ■ *Бер батманда ярмам бар, бер батманда һалмам бар* (Әкиәттән)./Шул һауытҡа тиң үлсәү берәмеге. *Бер батман май. Ике батман ярма.*

**3.** *ҡар.* **көбө** 1.

**БАТМУС** [*рус.* поднос] *и.* Сынаяҡ, һауыт ташыу, ашамлыҡты өҫтәлгә ҡуйыу һ. б. өсөн ситтәре өҫкә ҡайтарып эшләнгән махсус таҡта, тимер, пластмасса табаҡ. *Бибеш урындыҡҡа .. ашаулыҡ түшәне. Батмус менән сәйгүн, сынаяҡ, икмәк, һөт алып килде.* З. Биишева.

**БАТО́Н** [*рус.* ⟨*фр.*] *и.* **1.** Оҙонса итеп бешерелгән аҡ икмәк.

**2.** Оҙонса итеп эшләнгән кәнфит йәки шоколад. *Шоколад батоны.*

**БАТРА́К** [*рус.*] *и.* Байға ялланып эшләгән кеше; ялсы. *Ул [Зилский] эште батрактарына ҡушты ла, үҙе ҡарап йөрөнө.* Ғ. Дәүләтшин.

**БАТРАКЛЫҠ** *и.* Батрак эше. *Батраклыҡ итеү. Батраклыҡта йөрөү.* ■ *Атаһының ғүмер*

*буйы кемтерләп йыйған барлы-юклы малын, бер йылға еткермәй, туҙҙырып бөттө, унан башын Гәрәй байға батраклыкка һалды Ғамир.* Б. Бикбай.

**БАТША** [*фарс.*] *и.* **1.** Дәүләт башындағы сикләнмәгән хоҡуҡлы юғары хаким. *Рәсәй батшаһы. Батша заманы.* ■ *Дутов, Колчак әйтә, эш башына алтын тажлы батша менһен, тип.* Ш. Бабич. **Аҡ батша** Рәсәй батшаһы.

**2.** *миф.* Әкиәттәге төрлө йәнлек, тәбиғәт башлығы. *Дейеү батшаһы. Кул батшаһы.* ■ *Ҡыҙрас кара урмандағы бөтә коштоң батшаһы булып йәшәгән йөҙ ҙә бер йәшлек ябалакты .. тотоп ала* (Әкиәттән).

**3.** *күсм.* Йәнлек, коштарҙың иң көслөһө. *Ыласындан бейек оса торған кош батшаһы кыйғыр бар.* Салауат Юлаев.

**4.** *күсм.* Ниндәйҙер эш, һөнәрҙең иң ҙур оҫтаһы. *Уйын батшаһы.* ■ *[Олатайымды] айыу батшаһы тип кенә йөрөтәләр. Ул үҙ ғүмерендә алтмышка якын айыу атып алған.* З. Хисмәтуллин.

**БАТШАЙ** [1] *и.* Ала-сола итеп эре биҙәк төшөргән ебәк туҡыма.//*Батшай камзул. Батшай сапан.*

**БАТШАЙ** [2] *и. диал. кар.* **ҡырпыу** 1.

**БАТШАЛЫҠ** *и.* Башында батша торған дәүләт. *Яуыз түрәләрҙе куя икән Рәсәй генә тигән батшалык* (Халыҡ йырынан)./Батша хөкүмәте. *Батшалыкты колатыу.*

**БАТЫЛ** [*ғәр.*] *с. иҫк. кит.* **1.** Ялған. *Нисә яһил кешеләр мөрит була, шәйех тәслим булып ялған тәүбә кыла, тәүбәһе юк, якшы булып гөнаһ кыла, якшы булыу дәғүәләре батыл имде* (Бәйеттән).

**2.** Йүнһеҙ. *Биргәненә дәхи сабыр итмәк кәрәк, сабырһыҙлык батылдарҙан булыр имде* (Бәйеттән).

♦ **Батыл булыу** *диал.* хәбәр-хәтерһеҙ юҡ булыу; ғәйеп булыу. *Улар [Рубцов менән Утәголов] һаман өндәшмәй. Киттеләр ҙә батыл булдылар.* Ж. Кейекбаев.

**БАТЫНҠЫ** *с.* Эскә ҡарай уйынҡы; *киреһе кабарынкы. Быяланы кырып, шымартып, батынкы параболик күҙгө яһайҙар.* «Совет Башҡортостаны», 1968, 22 ноябрь.

**БАТЫР** [1] I *с.* **1.** Ҡурҡыу белмәҫ; ҡыйыу. *Батыр кеше.* ■ *Айбулат бик батыр төҫ менән: — Миңә бер нәмә лә кәрәкмәй. Ана Ныязголдоң приказчигы һыкрап йөрөй, уға бирегеҙ,— тине.* һ. Дәүләтшина. *Ил намыҫын һаклап, яуға сығыу — батыр егеттәрҙең бурысы* (Халыҡ йырынан). // *Батыр эшләү.*

**2.** Эш, тормошта тәүәккәл; ҡыйыу. *Һүҙгә батыр. Эшкә батыр.*//*Батыр эшләү.*

**II** *и.* **1.** Ҡыйыулығы, көсө менән танылған кеше. *Яу батыры.* ■ *Айбарланған батырҙарҙың төйәге булған Урал тау* (Ҡобайырҙан). *[Акъял:] Батырға куркыныс нәмә юк. Батыр үлемдән куркмаҫ булыр* (Әкиәттән)./Ҡыйыулығы, көсө менән таныҡлы кешенән ҡуйылған башлыҡ. *[Вахап:] Беҙгә бер яңы батыр һайларға кәрәк тә, эш башларға кәрәк.* Б. Бикбай./Яуҙа дан алған кешегә халыҡ биргән исем. *Салауат батыр.*

**2.** Бәйгелә көрәшкән кеше. *Көрәш ҙурайып китте. Йәш батырҙар исемле батырҙарҙы сакырырға тотонды.* Ш. Шәһәр.

**3.** Физакәр хеҙмәте менән танылған кеше. *Баҫыу батыры. Хеҙмәт батыры.*

**4.** (*баш хәреф менән*) Ир-ат исеме.

**БАТЫР** [2] *и. диал.* Сөй һурғыс.

**БАТЫРАЙЫУ** *к.* Батырға әйләнеү, ҡурҡыу белмәҫ булыу.— *Ә нишләп йөрөйһөң? — кыҙ был һорауҙарҙы ниңәлер ярым шаяртып һораны. Шуғамы икән, Айбулат та нығырак батырайып, көләп яуап бирҙе.* һ. Дәүләтшина.

**БАТЫРҒЫС** *и.* Ауҙы йәки ҡармаҡты һыуға батырыу өсөн тағылған ауырлыҡ. *Ҡармак батыргысы. Һөҙгө батыргысы.*

**БАТЫРЛАНЫУ** *к.* Батырға әйләнеү; батырайыу. *Ғәләү элек йыуаш егет булһа ла, хәҙер батырланып, кыйыуланып китте.* Т. Йәнәби. *Аранан бер кыҙ батырлана төштө: — Барыбыҙ ҙа шәп йырлайбыҙ. Тик беҙҙең йырлап, бейегәндә колхоз председателе генә яратмай.* М. Тажи.

**БАТЫРЛЫҠ** *и.* **1.** Ҡурҡыуһыҙлыҡ, тәүәкәллек сифаты, ҡыйыулыҡ. *[Һәүбән хакында Айһылыу:] Батырлыкта бер егет — дейеүҙәрҙе йыккан ул.* С. Мифтахов. *Көрәш һорай беҙҙән батырлыкты, көрәш һорай әҙер булыуҙы.* Х. Ҡунаҡбай.

**2.** Хеҙмәттәге фиҙакәрлек. *Хеҙмәт батырлығы күрһәтеү.*

**БАТЫРМАС** *и. диал.* Сыртлаҡ.

**БАТЫРСЫЛЫҠ** *и.* Кеше алдындағы ҡыйыулыҡ; баҙнат. *Байҙың һүҙенән Дәүләтбайҙың күңеле әрнеһә лә, каршы һүҙ кайтарырға батырсылығы етмәне.* И. Көҫәпҡол. *Дейеүҙе эҙләп табырға, уға каршы һуғыш асырға бер кемдең дә батырсылығы етмәгән* (Әкиәттән).

□ **Батырсылыҡ итеү** ҡыйыуланыу; баҙнатсылыҡ итеү. *[Самсон:] Зөләйхәнең кулын үбергә уйлағайным да, батырсылык итеп булманы. Әле яңы ғына күргән кешене ни, йә сикәгә сабып ебәреп, хур итер, тип курктым.* Т. Йәнәби.

**БАТЫРҺЫНЫУ** *к.* Үҙеңде батырға һанау, батыр итеп тойоу. *Батырһынган егетте яу килгәндә күрербеҙ* (Ҡобайырҙан).

**БАТЫРЫЛЫУ** *к. төш. кар.* **батырыу** 1—4.

**БАТЫРЫУ** *к.* **1.** Шыйыҡ, бөртөклө һәм башҡа нәмә эсенә индереү. *Ҡарға батырыу. Ҡомға батырыу.* ■ *[Гөлйөҙөм], силәген батырып, һыу алайым тип эйелгәндә генә .. кар шығырлаған тауышты ишетте.* һ. Дәүләтшина./Һыу төбөнә ебәреп, һәләк итеү. *Бөтә һуғыш пароходтарын диңгеҙҙәргә батырыу хыялы менән янабыҙ.* Д. Юлтый. *Германдарҙы касырҙык, калгандарын батырҙык* (Бәйеттән).

**2.** Һыу эсенә төшөрөп һалыу (шешендереү, ебетеү, серетеү өсөн). *Мискә батырыу. Һалабаш батырыу.*

**3.** Сәнсеп, ҡаҙап индереү. *Батыра сәнсеү.* ■ *[Эт] үткер тештәрен айыуҙың һимеҙ осаһына батырҙы.* Я. Хамматов.

**4.** Тотош, баштан-аяҡ буяу, мансыу. *Быскакка батырыу. Йәшкә батырыу. Кергә батырыу. Саңға батырыу. Тиргә батырыу./күсм.* Баштан-аяҡ бер хәлгә төшөрөү. *Бурыска батырыу. Кайғыға батырыу. Хыялға батырыу.*

**5.** Нык итеп төшөрөү (баш кейемен); баҫыу. *[Һалдаттарҙың] кайһы берҙәре яланбаш, икенселәре пилоткаларын батырып кейеп алған.* Р. Котошов.

**6.** *күсм.* Ғәйеп табып, бәләгә калдырыу. *Эштә батырыу.* ■ *Уның [Фәйзуллиндың] йөҙөндә миңә ярҙам итеү ҙә, батырырға тырышыу ҙа һиҙелмәне.* С. Агиш.

**БАТЫРЫШЫУ** *к. урт. кар.* **батырыу** 1, 4, 6. *Һалабаш батырышыу. Шаярып, карга батырышыу.*

**БАТЫУ** *к.* **1.** Баҫкан ауырлыкты тоймай убылыу. *Кар бата.* ■ *Тәгәрмәс юлдары ла, көпсәк кимәленә тиклем батып, койога әйләнгән.* Т. Хәйбуллин. *Бигерәк каты ямғыр яуа, барып булмай, баталыр* (Бәйеттән)./Соҡорайып төшөү (күҙгә, яңакка карата). *Оҙон буйлы, ике яңагы эскә батып торган .. Тайфуровты Сәгиҙә бер карауҙа ук Чапаевка окшатты.* М. Тажи. *[Кәримә апайҙың] ҙур кара күҙҙәре аҙырак эскә баткан.* Ш. Насыров.

**2.** Үҙ ауырлығы менән аҫка уйылыу. *Карга батыу. Комга батыу.* ■ *Акбуҙ Уралды йәнә сойорғотоп ебәрҙе, ти. Был юлы Урал ергә тубыктан батты, ти.* «Урал батыр».

**3.** Һыу аҫтына китеү. *Батып үлеү.* ■ *Калкыуыс батты! Балык капты!* З. Биишева. *[Зәйнәп:] Сәйҙел, улай тәрәнгә китмә, батып куйырһың.* Ғ. Сәләм./*күсм.* Нимәгәләр тотош бирелеү; сумыу. *Уйга батыу. Кайгыга батыу. Бурыска батыу.* ■ *[Төлкө:] Тукта әле, былар инде лә һыйга батты, мин дә инәйем, булмаһа* (Әкиәттән)./*күсм.* Эш, тормошта күтәрелә алмай баҫылыу. *Ғаилә, бала аҫрап, батып кала бик күп егеттәр.* Ғ. Сәләм.

**4.** Офоҡ артына инеү (күк есемдәренә карата); байыу. *Ай батты. Сулпан батты.* ■ *Кояш батып, шул вакыт кис булды, ти.* «Бабсаҡ менән Күсәк».

**5.** Сәнселеп, ҡаҙалып инеү. *Осло тимер уска батты.* ■ *Аткан уктың яртыһынан күбе күкрәгенә был йырткыстың батты шунда.* «Бабсаҡ менән Күсәк».

**6.** *күсм. һөйл.* Юк булыу, ғәйеп булыу (китеп). *Китә лә бата.* ■ *[Колош — Әскәпкә:] Шул фермаңа барһаң, батаһың да куяһың, әллә тоҙло һыу һипкәндәр инде.* Б. Бикбай.

**7.** Ярашлы, килешле булыу; ярау. *Аштан ниндәйҙер әскелтем тәм килә ине. „Бата ул беҙҙең ише кара корһакка“,— тип төрттөрөп куйҙы аранан береһе.* Х. Ғиләжев.

**8.** *күсм.* Тотош буялыу. *Быскакка батыу. Кергә батыу. Саңга батыу./күсм.* Манһылыу. *Йәшкә батыу. Канга батыу. Тиргә батыу.* ■ *Ак күбеккә баткан аттарын арытып, кыугынсылар кире кайткан.* Н. Иҙелбай.

♦ **Теш батыу** булдыра алыу, белеү. *Фатиманың да теше батмаган мәсьәләләр килеп сыккылай.* Б. Бикбай.

**БАУ** *и.* **1.** Ҡуша беркетеп, уратып бәйләү өсөн ишеп йәки бороп эшләнгән оҙон нәмә; бәй. *Ботинка бауы. Көлтә бауы. Мәрйен бауы. Мунсак бауы. Саңгы бауы. Шаршау бауы.* ■ *Байназар сейәләтеп бәйләгән сүс бауҙы бәке менән кыркып, токсайҙы өҫтәлгә ауҙарҙы.* Б. Бикбай. *Күк ыласын коштоң ай балаһы талпына-талпына бауҙа үлә* (Халыҡ йырынан).

**2.** Һан менән килгәндә: теҙеп бәйләп ҡуя торған нәмәләрҙең сама үлсәме. *Бер бау крәндил. Ике бау балан. Өс бау һуган.*

♦ **Бау һукмаған мал** иркендә йөрөгән мал. **Иңер бауы** *кар.* **иңербау. Ишек бауы** *кар.* **ишек. Ҡамыт бауы** *кар.* **колаҡбау** [1]**. Тамаҡ бауы** *кар.* **тамаҡбау.**

**БАУЛАНДЫРЫУ** *к.* Бауын һалындырыу. *Эткол баулаңдырып бәйләп куйган күлдәк ягаларын гартып йыртты.* Т. Хәйбуллин.

**БАУЛАНЫУ** *к.* **1.** *төш. кар.* **баулау** 1. *Бауланган һуган.*

**2.** Епкә, бауға эләгеп аҫылыныу. *[Хәжәр:] Был заманда бөтәбеҙҙең дә йөрәк бөткән инде. Ана өҙөләм, бына өҙөләм тип бауланып кына тора.* Ш. Янбаев.

**3.** Бер-бер артлы тағылыу. *Еңгәләре Фатиманы алып китергә иткәс, кыҙҙар бер-береһенә бауланып, бирмәҫкә кырталашты.* Ж. Кейекбаев.

**БАУЛАУ** *к.* **1.** Бауға теҙеү; бауға аҫыу. *Балан баулау. Һуган баулау.*

**2.** Бауға тағыу; бәйләү. *Билгә сукмар баулау.* ■ *[Ата-бабалар] арык атын еген, тәртәһенә яңгыҙ һыйырын баулаган да, тәбигәт косагына һөйөнөп сыгып киткән.* Н. Мусин.

**БАУЛЫ** *с.* Бауға тағылған, бау менән бәйләнгән; бәйле. *Ебәк кенә баулы күк карсыга талпына ла микән кош күреп* (Халыҡ йырынан).

♦ **Баулы яулыҡ** *диал.* ҡушъяулыҡ.

**БАУҺЫҘ** *с.* **1.** Бауға тағылмаған. *Бауһыҙ һуган.*

**2.** *күсм.* Кәүҙәне тота алмаҫлыҡ хәлһеҙ; быуынһыҙ. *Бауһыҙ булып йыгылыу.*

**БАУЫЛДАҠ** *с.* Бауылдап гел илаған; илаҡ. *Бауылдак булыу.*

**БАУЫЛДАУ** *к.* Илағанда яман тауыш менән ҡысҡырыу. *Бауылдап илау.*

**БАУЫЛЫУ** *к. диал. кар.* **мауығыу** 1.

**БАУЫР** *и.* **1.** Кеше һәм хайуан организмында үт эшләй торған эске ағза. *Бауыр юлы. Бауыр ауырыуы.*

**2.** *күсм.* Кешенең хис-тойғо тупланған урыны; йөрәк. *Бауырга баҫыу.* ■ *Бигерәк әрһеҙ [малай] бауырыңа инеп бара.* Р. Низамов.

**3.** *эйл. ф.* **бауырым** Яратып әйтеү һүҙе; бәгерем.— *Йәнем, гөлкәйем, һиңә ни булды? Кайҙа югалып йөрөнөң, бауырым? Һөйлә башыңдан үткән хәлдәреңде.* Ғ. Бағданов.

**4.** Йәнлек, хайуандың ҡорһаҡ, сандыры. *Бауыр аҫты. Ат бауырынан көрт.* ■ *Яйыкай ҙа һыуҙы аша сыктым ак бауырлы кара ат менән* (Халыҡ йырынан).

**5.** Нәмәнең бөгөлгән эске яғы. *Әҙернә лә яндың бауыры йока, ак ебәктәр кәрәк керешкә* (Халыҡ йырынан).

**6.** *күсм.* Ер-һыуҙың буйы, эргәһе. *Күл бауыры. Тау бауыры.*

**7.** *күсм.* Миҙгел һуҙымы, миҙгел дауамы. *Кыш бауыры оҙон.*

**8.** *күсм.* Нәҫел, тоҡом, зат.— *Янбай агай,.. һин дә миңә Колансәс кыҙыңды биреп, үҙ бауырың яһаһаң ни эшләр икән?* «Ҡуңыр

буға». *Атакайым мине һатып бирҙе, бауырҡайы башҡа булһын, тип* (Сеңләүҙән).

♦ **Бауыр ағасы** *диал. ҡар.* **борғоса** 1. **Бауыр баҫтырыу** һыйындырып, йыуаныс таптырыу. **Бауыр баҫыу** һыйынып, йыуаныс табыу. *Балаға бауыр баҫыу.* **Бауыр нте** бик ҡәҙерле, ғәзиз кешегә ҡарата әйтелә. *Бала — бауыр ите.* **Бауыр күтәреү** ныҒынып, донъя көтөрлөк хәлгә килеү; аяҡҡа баҫыу. *Бауыр күтәреп, арыу ғына йәшәй башлағанда һуғыш сығып китте.* **Бауыр ҡалҡыу** үҫеп, эшкә ярарлыҡ булыу. *Бауыр ҡалҡа төшкәс, малайҙарын Тимерйән тимерсегә бирә* (Әкиәттән). **Бауыр ҡатыу** 1) ҡаты күңеллегә әйләнеү; 2) *диал.* быуын ҡатыу (*ҡар.* **быуын** [1]). *Бауыры ҡатмаған йәш балалар.* **Бауыр өҙөлөү** ныҡ яфаланыу йәки әсенеү. *Һалҡын елдәрҙән өҙөлә бауырҙар.* М. Илбаев. **Бауыр түшәп ятыу** һуҙылып, йөҙтүбән ятыу. **Бауыр үләне** *шул уҡ* **шыршы үләне** (*ҡар.* **үлән**). **Бауыр һөйрәү** тормошта аяҡҡа баҫа алмай йонсоу. *[Сурагол:] Тәненә ит үрмәй, йөрәгенә май ҡунмай, бауыр һөйрәп, ыҙа сиккән Күсәрбай ҡусты ла беҙҙән китте.* Т. Хәйбуллин. **Бүре бауыр** рәхимһеҙ, ҡанһыҙ кешегә ҡарата әйтелә. *[Фатима:] Фәгилә бахырҙы бүре бауыр Саҡай ни ҡара көнгә еткерҙе.* Б. Викбай. **Ер бауыры** *ҡар.* **ер.** *Тарих көслө,.. көрәш майҙанында тормош өсөн ер бауырын ҡандан йыуҙырған.* Т. Йәнәби. **Ир бауыры** *ҡар.* **ир.** **Ҡара бауыр** ҡара эсле, яуыз кешегә ҡарата әйтелә.— *Хәмзә бутай донъяны. Кешене бер-береһенә һөсләтә,.. ҡара бауыр.* Я. Вәлиев. **Таш бауыр** ҡаты күңелле, рәхимһеҙ кешегә ҡарата әйтелә. *Атакайым минең ай таш бауыр, мин илаған саҡта иламай* (Сеңләүҙән). **Эт бауыры** *диал.* 1) эт ҡарағаты (*ҡар.* **ҡарағат**); 2) эт муйылы (*ҡар.* **муйыл**). **Ят** (*йәки* **сит**) **бауыр** сит, ят кешегә ҡарата әйтелә. *Араға ят бауырҙар инде.*

**БАУЫРҒАЛЫҠ** *и. диал. ҡар.* **бауырлыҡ** 1.

**БАУЫРҘАШ** *с.* Ҡан ҡәрҙәш. *Бауырҙаш ағай.*

**БАУЫРЛАНЫУ** *ҡ.* Ҡуйы, ҡатҡыл хәлгә килеү (ҡан, ҡатыҡ кеүек нәмәгә ҡарата). *Ҡатығы яҡшы ойоған, бауырланып тора.*

**БАУЫРЛАУ** *ҡ.* **1.** Ер-һыуҙы буйлау. *Тау бауырлау.* ■ *Сарсап килеп, ярға бауырлап, һыу эсә шай минең улҡайым.* К. Кинйәбулатова. *Күк ыласын оса күл бауырлап, тибер микән күгәл өйрәкте* (Халыҡ йырынан).

**2.** Ҡыҙырып йөрөү; гиҙеү. *Ил бауырлау.* ■ *Егет кенә бахыр ер бауырлай, күкрәк көсө менән мал табып* (Халыҡ йырынан).

♦ **Ер бауырлау** *ҡар.* **ер.**

**БАУЫРЛЫҠ** *и.* **1.** Аттын бауыр аҫтынан үткәреп ике тәртәгә бәйләгән бау (һарҡыу тотоу өсөн). *[Бай:] Юрғаға бауырлыҡ ҡуймай егеп, тау төшкәндә алып ҡасты.* Т. Хәйбуллин.

**2.** Көҙгө һыуыҡ ямғырҙа йәш малға бауыры аҫтынан алып бәйләгән йылы нәмә. *Елле-ямғырлы көндәр башланғас, колондарға бауырлыҡ бәйләргә булдылар, ти.* «Ҡуҙыйкүрпәс менән Маянһылыу».

**3.** Ваҡытһыҙ артылып, ваҡытһыҙ бәрәсләү булмаһын өсөн тәкәләрҙең бауыр аҫтын бәйләп ебәрә торған кейеҙ. *Бауырлыҡ бәйләү.*

**БАУЫРМАЛ** *с.* Кеше йәнле, рәхимле; бауырһаҡ. *Бауырмал кеше.*

● *Бауырмалға дуҫ күп.* Әйтем.

**БАУЫРҺАҠ** [1] *и.* Йоморҡаға баҫҡан ҡамырҙан ваҡ-ваҡ ҡына йомро итеп ҡырҡҡылап, майға ҡайнатып бешергән ашамлыҡ. *[Ғәзимә:] Бауырһаҡты арыулап, һары майға ғына бешерегеҙ. Туң май бауырһаҡтың тәмен ала ул.* Һ. Дәүләтшина.

**БАУЫРҺАҠ** [2] *с. диал.* Бауырмал.

**БАХИЛА** [*рус.* бахилы] *и. диал.* **1.** Һунар итеге.

**2.** Ҡуныслы калуш кеүек итеп үрелгән бауһыҙ йүкә ҡата.

**3.** *ҡар.* **бышым** 1.

**БАХЫР** *с.* Ҡыҙғаныс, аяныс хәлдәге; меҫкен. *[Әпсәләм:] Шундай шат, көләс ҡыҙ нишләп бахыр булһын. Бахыр булғас, йә ҡанаты һынған ҡош, йә әсәһен юғалтҡан бәпес кеүегерәк булырға тейеш.* С. Агиш. *Бахыр күк юрға таңға хәлдән тайып, тиргә батып ҡайта.* Һ. Дәүләтшина. // — *Үҙеңде бел, йәме! Йоҡлап йөрөп, сапҡыстан ҡолап ҡалғаныңды оноттоңмо ни, бахыр, һыуға төшкән өтөк әтәс!* М. Тажи.

**БАҺА** [1] [*фарс.*] *и.* **1.** Аҡсалата хаҡ. *Баһа ҡуйыу.* ■ *Урал тауҙарының аҫыл ташы, баһалары — оло мал башы* (Халыҡ йырынан).

**2.** Ниҙеңдер сифатын, әһәмиәтен билдәләгән фекер. *Баһа биреү.* ■ *[Һөнәрсе — Өйрәнсеккә:] Халыҡ ҡыуанысы, кеше рәхмәте менән хеҙмәттең иң оло баһаһы. Минең өсөн шунан да ҙур баһа юҡ.* З. Биишева.

**3.** Кемдең йәки ниҙеңдер тотҡан әһәмиәте, урыны; кәҙер. *Үҙеңдең баһаңды, кәҙереңде белеү.*

● *Уҡ баһаһы — атылғандан һуң, һүҙ баһаһы — әйтелгәндән һуң.* Мәҡәл.

**БАҺА** [2]**: да баһа (дә баһа), ҙа баһа (ҙә баһа), ла баһа (лә баһа), та баһа (тә баһа)** *киҫ.* әйтелгән фекерҙе ныҒыта. *Ана тора ла баһа. Аты бар ҙа баһа. Ҡайтҡан да баһа.* ■ *«Һуң бит, Айбулат быйылдан да ҡалмай хеҙмәткә китергә тейеш тә баһа»,— тип .. һөйләнде [Ныязгол].* Һ. Дәүләтшина. *Сәгиҙә ҡулы менән ҡарағай башына ымлап күрһәтте. [Тәнзилә эбей:] һай ҡорогор, унда бөркөт ултыра ла баһа, шунан ҡурҡып тауыш бирҙеңме?* М. Тажи.

**БАҺАДИР** [*фарс.*] *и.* Көслө, ғәйрәтле, йөрәкле кеше; батыр.//*Баһадир кеше. Баһадир йөрәкле. Баһадир кәүҙәле.*

**БАҺАЛАМА** *и. ҡар.* **баһа** [1] 2.

**БАҺАЛАНЫУ** *ҡ. төш. ҡар.* **баһалау.**

**БАҺАЛАУ** *ҡ.* Кемде йәки ниҙелер сифаты, әһәмиәте яғынан билдәләү. *Яҡшымын тип, күкрәк киреп сыкма, халыҡ үҙе күрер, баһалар.* З. Биишева.

**БАҺЫМ** *р. диал. ҡар.* **тиҙ** 1. *Әйҙә, баһым булайыҡ.*

**БАЦИЛЛА** [*рус.* ⟨ *лат.*] *и.* Таяҡса рәүешендәге бактерия. *Туберкулез бациллаһы.*

**БАШ** *и.* **1.** Кәүҙәнең кешелә юғарғы, башҡа йән эйәһендә алғы йәки юғарғы тарафындағы мейе урынлашҡан өлөшө. *Ат башы. Башты һелкетеү. Башты тотоу. Баш ауыртыу.* ■ *Башына аҡ селтәр шәл бөркәнгән бер ҡыҙ килеп сыкты.* Т. Йәнә-

би. *Ерән кашка аткайым, башын сайкай малкайым* (Халык йырынан). **Башка сығыу** башты томалау, иҫертеү. **Баш ташлау** башты һелтәү, баш сөйөү (атка карата). *Ат дилбегә каккандыла көтмәй, баш ташлап юрта.* С. Агиш. **Баш төҙәтеү** (*йәки* **йүнәтеү**) айныгас баш ауыртканын бөтөрөү өсөн эсеү. **Баш түбән** баш менән түбәнгә табан. *Баш түбән колау. Баш түбән аҫылынып тороу.* **Баш һөйәге** умырткалы хайуандарҙың һәм кешенең баш һөлдәһе. **Кыу баш** 1) йылкыларың кибеп бөткән баш һөйәге. *Йылкы малы күп ауырыһа, оҙак ямғыр яумаһа, кыу башты ситәнгә, капкаға элеп куяһың* (Ырымдан); 2) *күсм.* япа-яңғыҙ кешегә карата әйтелә. *[Һәүбән:] Тәмле һүҙгә алданып, кыу баш калдым донъяла.* „Акбуҙат“./*күсм.* Айырым йәки күмәк шәхес. *[Рәүеф:] Ир башың менән нисек зарланаһың инде.* Ф. Иҫәнғолов. *Карсығалар кеүек ирҙәр барҙа бәлә килмәҫ илдең башына* (Халык йырынан)./Йән эйәһенең иҫәп берәмеге. *Ике баш мал. Өс баш һарык.*

**2.** *күсм.* Акыл, зиһен. *Акыллы баш. Иҫәр баш. Баш эше. Баштан уткән хәл. Эшләп ултырған баш.* ■ *Сак кына серем итеп алғанда ла түбал кеүек баш аҙырак еңеләйер ине.* Б. Хәсән. *Мең төрлө уй катты баш, ни эшләргә лә аптыраш.* Ш. Бабич. **Кыуык баш** акылға еңел кешегә карата әйтелә. **Серек баш** башы эшләмәгән, иҫһеҙ. **Сепрәк** (*йәки* **сүбәк**) баш уйлай белмәгән акылһыҙ кешегә карата әйтелә. **Тауык баш** акылы етмәгән, уйлай белмәгән кешегә карата әйтелә. **Баш етеү** ниҙер уйларға, хәл нтергә зиһен етеү.

**3.** Аяктың, аяк кейеменең бәкәлдән түбәнге өлөшө. *Аяк башы. Быйма башы.* ■ *Ғәлимә әбей ойокка баш һабып бирҙе.* М. Ғафури.

**4.** Оҙон йәки һабаклы нәмәләрҙең тупалсыкланып торған осои *Бармак башы. Көнбағыш башы. Сөй башы. Шырпы башы. Һуған башы.*/ Айырым нәмәләрҙең иҫәп берәмеге. *Бер баш корот. Бер баш һуған.*

**5.** Ниҙеңдер өҫкө осо. *Ағас башы. Тау башы. Эҫкерт башы. Бағана башы.*/Ниҙеңдер өҫкө яғы. *Йөк башы. Мейес башы. Яр башы.* ■ *Өйгә төрәтеп эшләнгән солан. Уның башында әҙ генә бесән ята.* Т. Хәйбуллин. /Ниҙеңдер өҫтәге айырым өлөшө. *Ишек башы. Капка башы. Өй башы.* ■ *Ул [Шакир ағай] кешегә тәҙрә баштарын койоп эшләп бирә.* Ғ. Ғүмәр.

**6.** Оҙон нәмәнең бер осо. *Таяк башы. Тәртә башы. Таҫтамал башы.* ■ *Емеш көйәнтә башы менән йока боҙҙо сайрата һуғып, мәке асты.* З. Биишева. *Салауаткай тарткан курайҙың ике башкынаһы курғашлы.* (Халык йырынан). /Ниҙеңдер осона кейҙерә торған айырым нәмә. *Кәләм башы.* ■ *Йөн иләп ултырғанда беренең орсок башы төшөп китте, ти* (Әкиәттән).

**7.** Оҙонсарак майҙандың осо. *Ер башы. Күпер башы. Өҫтәл башы.* ■ *Кулактар игенде арзанырак хак менән эләктереп калыу өсөн .. баҙарҙың бер башынан икенсе башына йүгереп йөрөй.* Ғ. Дәүләтшин.

**8.** Хәрәкәттә булған төркөмдөң алды. *Колонна башы. Ылау башы.* ■ *[Айбулат:] Асатай, көтөүҙең башын кайыр!* Һ. Дәүләтшина.

**9.** Йылға, юл кеүектең башланған ере. *Йылға башы. Юл башы.* ■ *Яйык башы — Бөйөр тау, Иҙел башы — Ирәмәл тау.* «Заятүләк менән Һыуһылыу»./Эш-хәрәкәт, хәл, вакиға йәки миҙгелдең башланған мәле. *Ғүмер башы. Йыл башы. Туй башы. Яҙ башы. Урак башы.* ■ *Төш башына тиклем йоклап ятыуыма уңайһыҙландым.* Ф. Иҫәнғолов. *Әхмәт белә үҙенең бурлык башы шул Миңьяндан ғына килгәнен.* Ғ. Сәләм. /Берәй нәмәнең башланған тәүге өлөшө. *Һүҙ башы. Әкиәт башы.*

**10.** Әҫәр, яҙманың алға куйылған исеме. *Мәкәлә башы. Хикәйә башы.*

**11.** (*йәки* **икмәк башы**) Әсетке итеп калдырылған әсе камыр киҫәге. *Башы иҫке булды ахыры, икмәгем уңманы.*

**12.** Бүлеү иҫәбенең нигеҙ берәмеге. *Йән башына бүлеү.* ■ *Ат башына берәр кәбән бесән әҙерләнде. Арыштың төшөмөн гектар башына һалып караған юк.* М. Тажи.

**13.** Етәксе урын, етәкселек. *Ил башында тороу.* ■ *Эш башына хәҙер белемле кешеләр куйыла.*

**14.** Етәкселек итеүсе; башлык. *Ғәскәр башы. Баш булыу. Колхозға баш итеп куйыу.* **Йөҙ башы** йөҙ кешелек ғәскәри берәмек башлығы. **Мең башы** мең кешелек ғәскәри берәмек башлығы.

**15.** *с. мәғ.* Беренсе, тәүге. *Баш бала.* ■ *Төнгө көтөү якшы булһа, баш һауындарҙа һөт мул сыға.* М. Ғөбәйҙуллин.

**16.** *с. мәғ.* Урыны, вазифаһы буйынса оло. *Баш врач. Баш инженер. Баш коҙа.*

♦ **Ат башындай** *кар.* **ат** [1]. **Ат башында йөрөү** *кар.* **ат** [1]. **Атаң башы!** *кар.* **ата. Ауыртмаҫ** (*йәки* **ауыртмаған) башка тимер таяк** *кар.* **ауыртыу. Бармак** (*йәки* **итек, калак, турғай) башындай** 1) ҙур нәмәне бәләкәй итеп күрһәткәндә әйтелә. *Тимер .. ауылдан киткән сакта итек башындай ғына малай ине.* Б. Бикбай; 2) бәләкәй нәмәне ҙур итеп күрһәткәндә әйтелә. *Турғай башындай еләк.* **Баш алмай** (*йәки* **күтәрмәй, калкытмай)** эшләү тырышып туктамай эшләү. **Баш бармак** кулдың, аяктың беренсе йыуан кыҫка бармағы. **Баш биреү** буйһоноу, яйға килеү. *Баш бирерлек бала түгел. Ат баш бирмәй касты.* **Баш ватыу** кыйын бер мәсьәләне нык уйлау. *Беҙҙең иптәштәр хәҙергә һуғыш тураһында баш ватмай. Ашау, эсеү, шуны әҙерләү тураһында уйлай.* Д. Юлтый. **Баш ебәреү** башакка ултырыу (игенгә карата). **Баш китеү** 1) һөргөнгә китеү; 2) ситкә китеп олағыу, юғалыу. *Башы китте, кайтмаҫ, ти буғай* (Халык йырынан). **Баш күккә тейеү** бик нык шатланыу, һөйөнөү. **Баш күтәреү** кемгәлер каршы куҙғалыу, каршы сығыу. **Башка етеү** 1) харап итеү, һәләк итеү. *Кешенең башына етеү*; 2) юк итеү, бөтөрөү. *Малдың башына етеү.* **Баш кайнатыу** ниндәйҙер мәсьәләне хәл итә алмай нык уйлау. *Эш тураһында баш кайнатыу.* **Башка килеү** уй, фекер тыуыу. **Баш калкытмай [эшләү]** *кар.* **калкытыу. Баш калкытыу** 1) шытыу. *Һәр яҙҙы, үлән баш калкыта башлау менән «Буләктау» колхозының һауын һыйырҙары .. йәйләүгә сығарыла.* Д. Исламов; 2) арыуланыу. *Ашарҙа-*

*рына юк ауырыуҙан баш калкыта алмайҙар.* Һ. Дәүләтшина; 3) көс йыйып, күтәрелеү. *Кыҙыл Армия .. яуыз дошманды баш калкыта алмаҫлык итеп тар-мар итте.* Б. Хәсән; 4) каршы күтәрелеү; *Илбаҫарҙарға каршы бөтә ил баш калкытты.* **Башка сүп һындырыу** бер кеше ғүмер ҙә эшләмәгән бер яҡшы эш эшләгәндә әйтелә. **Башка тай типмәгән** (*йәки* **типкәнме ни**) кәрәкһеҙ, файҙаһыҙ бер эшкә тотонмаҫты белдергәндә әйтелә. *[Әлхәмов:] Бөтә булған бәлә-каза өсөн штраф түләп торорға башыма тай типмәгән.* С. Кулибай. **Башка төшөү** яҙмышка өлөшкә тейеү. **Баш катыу** күп уйлап ауара булыу. *[Рыҫкол:] Кемгә бараһың да кемгә баш ора беләһең? Баш катты инде.* Б. Бикбай. **Баш коҫоу** башак ебәреү (игенгә карата). *Бойҙай баш коҫто.* **Баш кушыу** 1) берҙәмлеккә килеү, берләшеү. *[Кормой:] Ыласын үҙ ыласынын тапмайынса, кауҙы менән баш кушамы ни?* Б. Бикбай; 2) ылығыу, эйәләшеү. *[Нигмәт:] Анау өскүҙ Сафаның һыйыры касып, йөҙәтеп бөттө. Яңы алынған һыйыр, бер ҙә баш кушмай.* Н. Кәрип. **Баш мәкәлә** газета-журналдың йәки китаптың алдында бирелгән төп мәкәлә. **Баш ороу** 1) түбәнселек менән мөрәжәғәт итеү. *Түрәгә баш ороу;* 2) *диал.* ошаклау. **Баш өҫтө** *иҫк.* йомош кушкан түрәгә куштанлык күрһәтеп әйтелә. **Баш сүмесе** *диал. кар.* **соңка** [1] 1. **Баш сыкмау** ниндәйҙер хәлдән котола алмау. *Бурыстан баш сыкмай.* ■ *Түләбай агай йыуаш кына, байға ялланыуҙан башы сыкмаган бер кеше.* Ғ. Ибраһим-Кыпсак. **Баштан ашыу** бик күп булыу; саманан артыу. *Кәмәр әбейҙең кыуанысы башынан ашкан.* Ғ. Дәүләтшин. *[Барсынһылыу:] Батырлыгың баштан ашкан, матурлыгың һыуҙай ташкан.* «Алпамыша». **Баштан себен осороу** ғәйепһеҙ булырға тырышып, акланыу. *[Шымбай — мулла хакында:] Мәсетте һибә итте лә башынан себен осорҙо, йәнәһе.* Сәүит яклы булды. З. Биишева. **Баштан һыйпау** яҡшы күреү, маҡтау. *[Тәуфикә — Мөхтәрәгә:] Кемде канат аҫтына алғаныңды беләм. Бының өсөн башыңдан һыйпамаҫтар.* С. Кулибай. **Баш тартыу** кемдән, нимәнән кабул итергә, үтәргә ризаһыҙлык белдереү; кире кағыу. *Бурыстан баш тартыу.* ■ *Атыу өсөн приказ булһа ла улар [һалдаттар] үтәмәне, баш тартты.* Д. Юлтый. **Башты баҫыу** баш күтәрмәү, өндәшмәү. *Башты баҫып эшләү.* ■ *Хәҙер баш[ты] баҫып укырға ла укырға.* Ж. Кейекбаев. **Баш тығыу** 1) берәй эш-хәлгә кыҫылыу, катнашыу. *Мәшәкәтле эшкә баш тығыу*; 2) барып, урын, ярҙам табыу. *Кайҙа барып баш тығырға? Тамак туйҙырырлык кына булһа ла ниндәй эш табырға.* Ж. Кейекбаев. **Башты ашау** һәләк итеү, харап итеү. *Хас дошмандар нахак бәлә ябып, ашанылар гәзиз башымды* (Халык йырынан). **Башты катырыу** аптыратыу, йөҙәтеү. **Башты ташка бәреп булмай** сараһыҙлыкты белдереү өсөн әйтелә. *[Укытыусы:] Кыҙганыс та бит, ни эшләйһең инде, башты ташка бәреп булмай.* З. Биишева. **Баш хэреф** ҙур хәреф. **Баш һалыу** 1) корбан булыу. *Аҫыл ирҙәр яуҙа баш һала* (Халык йырынан); 2) ризаһыҙлык белдереп, буйһоноу. *Ихтыяран батшаға баш һалдыгыҙ һеҙ [башкорттар], рәхәтлектә, тыныслыкта калдыгыҙ һеҙ.* С. Якшығолов. **Баш һөйләм** үҙенә буйһонған эйәрсен һөйләме булған һөйләм. **Баш һуккан якка китеү** теләгән якка китеү, теләһә кайҙа китеү. *Көтөүҙе тау буйына алып барып һала ла [көтөүсе], үҙе баш һуккан якка сыға ла китә.* М. Тажи. **Башы бәйле** булыры шикһеҙ. *Германия еңеләсәк. Бының башы бәйле.* Ж. Кейекбаев. **Башы нке түгел** *йәки* **башы икеме ни** бәләле бер эшкә бармаҫты белдергәндә әйтелә. *Ундай хәбәр һөйләргә башым икелер шул.. Уны-быны айырырлык зиһенем бар әле.* М. Тажи. **Башы каты** теҙгенгә буйһонмаған малға карата әйтелә. *Миңә ат бирҙеләр. Һары юрға. ..Тик башы каты, кайһы сакта буй бирмәҫкә итә.* С. Әлибаев. **Башы ла, койроғо ла юк** аңламаҫлык, буталсык эшкә йәки һүҙгә әйтелә. *Әңгәмәнең башы ла, койрогы ла булманы, береһе башлана, икенсеһе ташлана барҙы.* Х. Хәйри. **Баш әйеү** буйһоноу, табыныу. *Салауаттай ирҙәр баш эймәҫ, аяк-кулына быгау һалһаң да* (Халык йырынан). **Кара баш** япа-яңғыҙ кешегә карата әйтелә. **Кара башыңа булғыр!** карғағанда әйтелә. **Йүгән башы** йүгәндең ат башына кейҙерә торған өлөшө. **Үҙе баш, үҙе түш** бер кем менән дә иҫәпләшмәй, һәр нәмәне үҙе генә хәл итә торған кешегә карата әйтелә.

● *Балык башынан серей.* Мәкәл. *Башһыҙ йортта ата тороп, ул һөйләр.* Мәкәл. *Карганы илгә баш итһәң, каргыштан башың сыкмаҫ.* Мәкәл. *Мал башы тауык.* Әйтем.

**БАШАҒАС** *и.* Кыйык, кәбән башына баҫтырып һалған ағас.

**БАШАҒАСЛАУ** *к.* Башаған һалып баҫтырыу. *Кәбәнде башагаслау.*

**БАШАК** [1] *и.* Кыяклы үҫемлектең емле башы. *Кылсыклы башак. Башак ебәреү. Башакка ултырыу. Башак сүпләү.* ■ *Ғимран бер бөртөк башакты көлтәнән һабагы менән һурып алып, усына ыуҙы ла тарының уңғанлыгына бик һокланды.* Ж. Кейекбаев.

**БАШАК** [2] *и.* Ук башына куйылған үткер ос. *Еҙ башак. Мөгөҙ башак. Корос башак.* ■ *[Егет] имән кыркып, ук яһаган, уктың башагына осло таш куйган* (Әкиәттән).

**БАШАКЛАНЫУ** *к.* Башак ебәреү, башакка ултырыу. *Бойҙай уңманы. Ул башакланып һөтләнә генә башланы ла эҫегә курылып катты.* Я. Хамматов.

**БАШАКЛАУ** [1] *к.* Ашлык башын сүпләп урыу.

**БАШАКЛАУ** [2] *к.* Башаклы итеү, башак куйыу (укка). *Баяр Тәфкилевкә асыу итеп [башкорт], ук башаклап, уны һырлаган.* Б. Вәлит.

**БАШАЛТАЙ** *и.* Кыҫка кунылы йөн ойок. *Башалтай бәйләү. Башалтай кейеү.*

**БАШАУ** *к. диал. кар.* **башаклау** [1].

**БАШ-АЯК** *и.* **1.** *йыйн.* Баш менән аяк; бөтә кәүҙә.

**2.** *эйл. ф.* **баш-аягы** Бөтә булғаны; бөтәһе, барлығы. *Баш-аягы бер токарь станогы бар. Уны ла, урын юклыктан, бәләкәй генә будкага куйгандар.* «Совет Башкортостаны», 1966, 5 март.

◆ **Баш-аяғы менән** тотош. *Баш-аягы менән эшкә сумган.* **Баш-аяк китеү** (*йәки* **кайтыу**)

бөтөнләй, башкөллө китеү, ҡайтыу. **Бәләнән баш-аяҡ** бәләнән алыҫ булған яҡшы, тигән мәғәнәлә әйтелә. *[Сәйҙеямал — улына:] — Әй, балам, беруҡ үҙеңде һаҡла инде. Бәләнән баш--аяҡ.* Я. Хамматов.

**БАШБАШТАҠ** *с.* Кешене иҫәпкә алмайынса, үҙенсәбаш итеүсән; үҙ белдекле. *Башбаштаҡ бала.* ■ *[Рәхимә:] Илла башбаштаҡ беҙҙең был Айбулат, үҙе тигәнсә йөрөп тик ята.* Һ. Дәүләтшина.

**БАШБАШТАҠЛАНЫУ** *ҡ.* Башбаштаҡлыҡ итеү. *Башбаштаҡланып икенсе участкаға киткәнһең, тип .. председатель асыулан[ды].* Н. Мусин.

**БАШБАШТАҠЛЫҠ** *и.* Башбаштаҡ эшләнгән эш. *Башбаштаҡлыҡ итеү. Башбаштаҡлыҡҡа юл ҡуйыу. Башбаштаҡлыҡты бөтөрөү.* ■ *[Өмөтбай:] Был егет тағы бер башбаштаҡлыҡ эшләп ташламаһын, теҙгененән тартыбыраҡ тоторға кәрәк.* Б. Хәсән.

**БАШ-БАШЫ** *и. йыйн.* Ниҙендер ике яҡ осо. *Баш-башы сигелгән таҫтамал.* ■ *Һөргән сакта ерҙең баш-башында сей ҡалдырыла.* «Совет Башҡортостаны», 1970, 17 февраль.

**БАШКИҪӘР** *и.* **1.** Язалаусы, палач.

**2.** Талап, үлтереп йөрөгән кеше.

**БАШКӨЛЛӨ** *р. диал.* Бөтөнләйгә, тотош. *Башкөллө ҡайтыу.* ■ *Застава Вадим бабайға атты башкөллө бүләк итеп биргән.* С. Кулибай.

**БАШКӨЛЛӘЙ** *р. диал.* Бөтөнләй, тотош.

**БАШ-КҮҘ: баш-күҙ алыу** ауыр хәлдән арынып, арыуланыу. *[Аҡназар] бер аҙ баш-күҙ алып, ҡәҙимге кләҫтиән булып китте.* Ғ. Дәүләтшин.

**БАШКҮНӘК** *и.* Йылҡының баш тиреһенән яһалған һауыт. *Йәйләүҙәргә барҙыҡ, бейәләр һауҙыҡ, башкүнәкәйҙәрҙе ҡулға алып* (Халыҡ йырынан).

**БАШҠА** [1] *с.* **1.** Үҙенә бер яры; айырым. // *Башҡа ашау. Башҡа тороу.* ■ *Ир-егеттең ҡылғаны илдән башҡа була алмаҫ* (Ҡобайырҙан). **Башҡа сығыу** төп өйҙән бүленеп сығыу. **Үҙенә башҡа** 1) үҙе бер яры, айырым; 2) үҙенә бер төрлө.

**2.** Икенсе бер нәмәнән айырмалы; бүтән. *[Тимер:] Бына мин башҡа шарттарҙа тороп ятам: яңы тормош, яңы кешеләр.* Б. Бикбай.

**3.** Бынан икенсе; бүтән. *Башҡа ваҡыт. Башҡа ер.* ■ *Зөлхизә башҡа бер егеткә лә ҡарамай. Аҙнаголдо көтөп, .. моңайып йырлап йөрөй.* З. Биишева.//*Кейеҙбай башҡаларға һиҙҙермәй генә ағаһының бөйөрөнә төртөп, аяғына баҫып ала* (Әкиәттән).

**4.** *р. мәғ.* Бынан ары; бүтән. *Муйылбикә башҡа өндәшмәне. Сәйен йыйыштырып, урын һалды ла йоҡларға яттылар.* Һ. Дәүләтшина.

◆ **Башынан башҡа булыу** бала табып, ауырҙан ҡотолоу. *Ярай инде, иҫән-һау башынан башҡа булды.* Һ. Дәүләтшина. **Һәм башҡалар** исемләп һанап сыҡҡас, тағы дауам итә, тигәнде белдерә.

**БАШҠА** [2] *бәйл.* Сығанаҡ килештәге һүҙҙәр менән килеп, «бүтән» мәғәнәһен бирә. *Атайыма бер салбарлыҡтан башҡа бер нәмә лә алып ҡайта алманым.* Т. Йәнәби.

**БАШҠАЛАНЫУ** *ҡ.* **1.** Төп өйҙән бүленеп сығыу. *Улы Әхмәҙи, атаһының иҫәллегенә сыҙай алмай, башҡалангас та кире әйләнеп ҡайтыр әле тип йөрөй ул [Үмәр].* М. Минһажетдинов.

**2.** Икенсе төрлөгә әйләнеү, башҡа төҫкә инеү; үҙгәреү. *Совет власы сығып, ирек алғас, .. заман башҡаланды.* И. Ғиззәтуллин.

**3.** *диал.* Алмашаланыу.

**БАШҠАРМА 1.** *с.* Ҡарарҙарҙы үтәү, туранан--тура етәкселек итеү эшен тормошҡа ашырған (ойошмаға ҡарата) *Башҡарма комитет. Башҡарма орган.*

**2.** *и.* Ҡарарҙарҙы үтәү, туранан-тура етәкселек итеү эшен тормошҡа ашырған ойошма, учреждение. *[Шәүәли] башта ауыл советында секретарь булып эшләй. Унан волость башҡармаһына күсә.* Б. Бикбай.

**БАШҠАРЫЛЫУ** [1] *ҡ. төш. ҡар.* **башҡарыу** [1].

**БАШҠАРЫЛЫУ** [2] *и. грам.* Эйәртеүсе һүҙ эйәреүсе һүҙҙең билдәле бер килештә тороуын талап иткән синтаксик бәйләнеш.

**БАШҠАРЫУ** [1] *ҡ.* **1.** Бойомға ашырыу, үтәү. *Бурысты башҡарыу.* ■ *БАССР граждандары дәүләт һәм йәмәғәт ойошмаларының, шулай уҡ вазифалы кешеләрҙең үҙ хеҙмәт вазифаларын башҡарғанда законһыҙ эш итеүҙәре арҡаһында килтерелгән зыянды түләтергә хоҡуҡлы.* Башҡорт АССР-ының Конституцияһы, 1984. *Өйрәнсек үҙ эшен сәғәт теүәллегендә башҡара.* З. Биишева.

**2.** Тамаша өсөн сәнғәт әҫәрен үтәү. *Йыр башҡарыу. Роль башҡарыу.*

**БАШҠАРЫУ** [2] *ҡ. диал. ҡар.* **башҡаланыу** 2.

**БАШҠАСА** *р.* **1.** Башҡа төрлө, икенсе бер төрлө; бүтәнсә. *Башҡаса уйлау. Башҡаса эшләү.* ■ *Эш башҡаса китте колхозда: тырышалар, урам буйында темеҫкенеп йөрөүселәр аҙайҙы.* Б. Бикбай.

**2.** Бынан ары; бүтән. *[Зәйнәп:] Юҡ, Сәйҙелем булмай теләһәң дә, беҙ башҡаса емеш бирмәйбеҙ.* Ғ. Сәләм.

**БАШҠОРТ** *и.* Башҡортостандың төп халҡын тәшкил иткән милләт һәм шул милләттең бер кешеһе (төрки телдәрҙең береһендә һөйләшә). *Тау башҡорттары. Ялан башҡорттары. Башҡорт ҡыҙы. Башҡорт теле. Башҡорт аштары. Башҡорт балы. Башҡорт ҡымыҙы. Башҡорт бейеүҙәре.* ■ *Яҙма документтарҙан күренеүенсә, башҡорттар бына хәҙер бер мең йылдан артыҡ ваҡыт буйы Көньяҡ Уралдың ерле халҡы булып иҫәпләнә.* Н. Мәжитов. *Бабич, башҡорт ғаиләһенән сығып, башҡорттар араһында үҫеп, башҡорт халҡының моң, зарын йырлаған һәм шул милләттең хәрәкәтенә ҡатнашып, шул илдә үлгән башҡорт шағиры.* И. Насыри.

**БАШҠОРТЛАШЫУ** *ҡ.* Теле менән башҡортҡа әйләнеү. *Пашкаының да, атаһы Кузьманың да гел башҡорттар араһында йөрөп, башҡортлашып бөткәнен ул һуңынан ғына аңланы.* Ш. Насыров.

**БАШҠОРТСА** *р.* **1.** Башҡорт телендә. *Башҡортса белеү. Башҡортса уҡыу. Башҡортса һөйләү. Башҡортса яҙыу.* ■ *Стамбулда үткәрелгән тюркология конгресында миңә башҡортса*

*таҙа һөйләшкән тағы ике сит ил кешеһе менән танышырға тура килде.* М. Сәғитов.

**2.** Башҡорттар кеүек, башҡорт халҡына хас. *Башҡортса бейеү. Башҡортса кейенеү.*

**БАШҠОРТСАЛАШТЫРЫУ** *ҡ.* Башҡорт теленә әйләндереү. *Фильмды башҡортсалаштырыу.*

**БАШҠУЛЛАЙ** *р. диал.* Бөтөнләйгә.

**БАШЛАНҒЫС** *и.* **1.** Ниҙелер башлап ебәргән нәмә. *Һәр файҙалы эште яҡларға, бәләкәйме, ҙурмы, һәр яңылыҡтың башланғысын тоя белергә кәрәк.* М. Тажи.

**2.** Ниндәйҙер өлкәлә башланған яңы эш. *Заводтың эшселәре .. Мәскәү һәм Ленинград кешеләренең башланғысын өйрәнә.* «Совет Башҡортостаны», 1965, 16 февраль.

**3.** *с. мәғ.* Ниҙендер башы, беренсе баҫҡысы булған. *Башланғыс белем. Башланғыс мәктәп.*

**БАШЛАНДЫРЫҠ** *и. туҡ.* Киндер башлағанда, буйлыҡ ептәрҙең осон элеп, борғосаға беркетеп тора торған таяҡ.

**БАШЛАНЫУ** *ҡ.* **1.** Ғәмәл алыу. *Ағиҙел Уралдан башлана.* ■ *[Алып менән Барсындын] ете улынан ете башҡорт ырыуы башланып киткән, ти* (Әкиәттән).

**2.** Ғәмәлләшә башлау. *Бәйге башланды. Буран башланды. Эш башланды.* ■ *Уйындар башланды. Башта һүрән ине. Һуңынан ҡыҙа төштө.* С. Агиш.

**3.** Тотонола башлау. *Башланған икмәк. Башланған май. Башланған дәфтәр.*

**БАШЛАП** **1.** *р.* Беренсе булып, иң элек; тәүҙә. *Башлап өйҙәге кешеләр менән Буранбай көрешсе, уның артынан беҙ көрешеп сыҡтыҡ.* Д. Юлтый. *Сәғиҙә үҙе башлап һаулыҡ һорашҡас ҡына, улар хор менән: — Һәйбәт, рәхмәт, Сәғиҙә Хәсәновна! — тип яуап ҡайтарҙы.* М. Тажи./ Беренсе ҡат, тәүге тапҡыр. *Гөлйөҙөм үҙенә бик яҡын булған был инәһен бөгөн башлап күргән кеүек һоҡланып ҡарай ине.* Һ. Дәүләтшина. *Рәмзилә ханым, иренең йөҙөнә күҙ төшөрөп алғас, ихтыярһыҙ[ҙан]: „Был, валлаһи, мин башлап күргәндәге Нурулла түгел, ә икенсе, таш бәгерле Нурулла“,— тип уйлап алды.* Х. Зарипов.

**2.** *бәйл. функцияһында* Сығанаҡ килештәге һүҙҙәрҙән һуң килеп, ниҙеңдер башланғыс сиген белдерә. *Ауылдан башлап урманға тиклем. Балаларҙан башлап ололарғаса. Яҙҙан башлап көҙгә тиклем.* ■ *Шулай итеп, бөгөндән башлап уҙ алдыбыҙға көн итә торған кешеләр булып киттекме икән ни?* С. Агиш. *Кистән башлап таңға тиклем беҙ йөрөйбөҙ походта* (Бәйеттән).

**БАШЛАТЫУ** *ҡ. йөкм. ҡар.* **башлау.** *Йыр башлатыу. Эш башлатыу.*

**БАШЛАУ** *ҡ.* **1.** Эш-хәлгә билдәле бер урындан, ваҡыттан тотоноу; керешеү. *Баштан башлау. Ҡабаттан башлау.* ■ *Новиков эстән тулҡынлана. Ул башлап китергә һүҙ таба алмай.* Д. Юлтый. *Әмирханов ултырыу менән үҙенекеләргә боролоп ҡараны. Был уның: «Мин башланым, һеҙ дауам итегеҙ»,— тиеүе ине.* С. Агиш.

**2.** Ғәмәлләшергә керешеү. *Йыйылышты башлау. Йыр башлау. Һөжүм башлау. Һүҙ башлау. Эш башлау. Әҙерлек башлау.* ■ *Фронтта осраштыҡ беҙ уның менән,— тип башлап китте Хасбулат олатай хикмәтле хикәйәһен.* З. Биишева.

**3.** Тотонорға керешеү. *Бер бот ондо башлау. Төпәндәге балды башлау.*

**4.** Хәл ҡылымдың *-а* формаһындағы һүҙ менән килеп, эш-хәрәкәттең башын белдерә. *Ала башлау. Асыға башлау. Борсола башлау. Йөрөй башлау. Сыға башлау. Уҡый башлау. Яҡтыра башлау.*

◆ **Һыуға башлау** *шул уҡ* **һыу башлатыу** (*ҡар.* **һыу.**) **Юл башлау** *ҡар.* **юл** [1].

**БАШЛЫ** *с.* **1.** Башы (1—6 мәғ.) булған. *Башлы һуған. Башлы сөй. Алты башлы дейеү. Таҡыя башлы ҡурай. Алмас башлы уҡ. Осло башлы туфли. Ҡыҙыл башлы таҫтамал.* ■ *Һалам башлы өй ҙә барҙыр әле ҡайбер ауылда, әммә ҡыйыҡ кәбәк башлы бәндә булһа янында.* Ғ. Дәүләтов.

**2.** Аҡылға бай; аҡыллы. *Башлы кеше.* ■ *[Ғамир:] Председатель һайлау — көтөүсе ҡуйыу түгел ул. Кәнешнә, көтөүсе лә башлы булырға тейеш.* Б. Бикбай.

● *Башлыҡ булһаң, башлы бул, йыйырылмаҫ ҡашлы бул.* Мәҡәл.

**БАШЛЫ-КҮҘЛЕ: башлы-күҙле булыу** ғаиләле булыу. *Мисбах ҡарттың өс ҡыҙы ла кейәүгә китте. Ҡатыны ҡыҙҙарының башлы-күҙле булғанына шатланып бөтә алманы.* Б. Бикбай. **Башлы-күҙле итеү** ғаиләле итеү. *[Әсәһе — Әхмәткә:] Барын да өйләндерҙем, инде һине башлы-күҙле итһәк, туйыңды күрһәк, .. бик шатланыр инек.* Ғ. Хәйри.

**БАШЛЫҠ** [1] *и.* Берәй төркөмгә, хужалыҡҡа етәкселек итеүсе; етәксе. *Ғәскәр башлығы. Звено башлығы.* ■ *Салауаттың өс ыҫпай һыбайлыһы, байраҡ елберләтеп, Пугачёв армияһы ҡаршыһына юрттырып килде, башлыҡтары Салауат Юлаевтың хөрмәтле батшаны көтөүен, ғәскәрҙе уға ҡушыуын хәбәр итте.* Ғ. Хөсәйенов. *Йыйҙы майҙан башлығы яулыҡ, акса вә таҫтамал.* Ш. Бабич.

**БАШЛЫҠ** [2] *и.* **1.** Еңел баш кейеме. *Буҫтау башлыҡ. Бәйләгән башлыҡ. Йөн башлыҡ.*

**2.** Өҫ кейеменең үҙенән сығарып теккән баш кейеме. *Накидка башлығы. Плащ башлығы.*

**БАШЛЫҠ** [3] *и. диал.* Башкүнәк.

**БАШЛЫСА** *р.* Күбеһенсә, нигеҙҙә. *Ауылда башлыса бисә-сәсә, ҡарт-ҡоро, бала-саға ғына тороп ҡалған.* Д. Исламов.

**БАШМА-БАШ** *р.* Бер-беренә бәрәбәр, өҫтәүһеҙ, түләүһеҙ. *Башма-баш алмашыу. Башма-баш биреү.*

**БАШМАҠ** [1] *и.* Ярты йәштән алып йәш ярымға тиклемге һыйыр малы. *Орғасы башмаҡ. Үгеҙ башмаҡ.*

**БАШМАҠ** [2] *и.* Ҡунысһыҙ күн аяҡ кейеме. *Ҡотлой, һикенән тиҙ төшөп, ялан аяғына башмаҡ кейҙе.* А. Таһиров. *Һәүеҙә, иренең, ят кеше алып килеүен күреп, яланғас аяғына башмаҡ ҡатаһын эләктерҙе.* Я. Хамматов.

**БАШМАҠСЫ** *и.* Башмаҡ тегеүсе.

● *Башыңа төшһә, башмаҡсы булырһың.* Әйтем.

**БАШНЯ** [*рус.*] *и.* **1.** Айырым итеп йәки йортҡа ҡушып һалынған бейек тар ҡоролма. *Кремль башнялары. Силос башняһы. Һыу башняһы. Телевизион башня.*

**2.** Карапттың, танктың туп ултыртылған әйләнмәле ҡалпағы. *Танк командиры Арыҫланов агас араһынан төбәлгән оҙон пушка көбәген күреп ҡала. Танк башняһы шул яҡҡа борола.* «Совет Башҡортостаны», 1967, 3 ноябрь.

**БАШСЫ** *и. кар.* **юлбашсы.**

**БАШТА** *р.* Иң элек, тәүҙә. *[Солтан:] Мин дә бит башта, отрядҡа ҡыҙҙарҙы алмайыҡ, улар имгәк кенә булырҙар, тинем.* Ш. Бикҡол. *Кейеҙбай башта, ярты юлды үткәнсә, артта калыбыраҡ барҙы, шунан бөтәһен дә уҙып китеп, майҙанга беренсе булып килеп инде* (Әкиәттән).

**БАШТАҠ** *с. диал.* Башбаштаҡ.

**БАШТАН** *р.* Иң әүәлдән, иң тәүҙән. *Фатима хәлде баштан төшөп һөйләргә кереште.* Б. Бикбай.

**БАШТАН-АЯҠ** *р.* **1.** Баштан аяҡҡа тиклем; тотош. *Баштан-аяҡҡа бысраныу./кусм.* Бөтә булмышы менән; бөтөнләй. *Баштан-аяҡ эшкә сумыу.*

**2.** Баштан аҙаҡҡа тиклем; тотош. *Мәҡәләне баштан-аяҡ күҙҙән үткәреү. Хәбәрҙе баштан-аяҡ һөйләү.* ■ *Хасбулат олатайҙың хикәйәтен баштан-аяҡ уйлап сыгам.* З. Биишева./Бөтә яҡлап; тотошо менән. *Тәҡдимгә баштан-аяҡ риза булыу.* **Баштан-аяҡ ҡоралланыу** бик ныҡ ҡоралланыу.

**БАШ-ТОЯҠ** *и. йыйн.* Түшкәнең башы менән тояҡтары. *Һарыҡтың баш-тояғы. Баш-тояҡ өтөү.*

♦ **Башы-тояғы менән** тулыһынса, тотош.

**БАШТҮБӘН** *р. шул уҡ* **баш түбән** (*кар.* **баш** 1).

**БАШҺЫҘ** *с.* Аҡылға һай; аҡылһыҙ. *Башһыҙ кеше.*

**БАШҺЫҘЛАНЫУ** *к.* Аҡылһыҙ ҡыланыу; аҡылһыҙланыу.

**БАШҺЫНЫУ** *к.* **1.** Хуп, лайыҡ күреү; хупһыныу. **Һыйҙы башһынмау.**

**2.** Яйға килеү, табыныу; буйһоноу. *Ишморат тигән кеше шул урынга күсеп ултырырга уйлаган. Башһынмай йөрөй тип, уга йөҙ камсы һуҡтыргандар* (Хикәйәттән).

**БАШЫНА-БАШ** *р. диал.* Башма-баш.

**БАШЫРЫУ** *к. диал.* Ялыу итеү, еткереү.

**БАЯ** *р.* Бынан бер аҙ элек, күптән түгел; яңыраҡ. *Баянан бире.* ■ *Бая һуҙһеҙ ултырыу үлем ине. Хәҙерге минутта һәр һүҙ артыҡ һәм килешһеҙ.* Д. Юлтый.— *Бая һине бер урыҫ һорашып киткәйне.* Я. Хамматов.

**БАЯҒЫ** *с.* **1.** Бынан бер аҙ элекке. *Баягы хәбәр. Баягы кеше.* ■ *Сания баягы талаштарын бөтөнләй онотоп, һүҙгә кереште.* С. Агиш.

**2.** (*йәки* **элеге лә баяғы**) *инш.* Һаман да шул, әлеге шул.— *Ул сакта әле минең йәшлек матурлыгы ла бөтөп етмәгән сак. Әлеге лә баягы, аҫау бейә кеүек тулап торган сак.* З. Биишева.

**БАЯҒЫСА** *р.* **1.** Баяғы кеүек. *Ишек баягыса тыштан бикле тора. Тимәк уларҙың [үгрыларҙың] башка юлы булырга тейеш.* Б. Бикбай.

**2.** Һәр ваҡыттағыса, ғәҙәттәгесә. *Мин ни бер катлы кеше, баягыса, йәшереп-нитеп тормай, Зөләйхәгә нисек һүҙ башлагынымды, уның минә ҡайтарган яуабын һөйләйем дә бирәм.* Т. Йәнәби.

**БАЯЛА** *и. диал.* Кәләп ағасы. **Баяла һалыу** 1) епте баялаға урау; 2) *кусм.* эшһеҙ буш йөрөү.

**БАЯН**[1] [*рус.*] *и.* Күп телле ҙур гармун. *Йәш егет баяндын һуҙып ебәрҙе. Ике катын таҡмаҡ әйтеп, бейей башланы.* Д. Юлтый.

**БАЯН**[2] [*гәр.*] *и.* **1.** Ниҙер хаҡында хәбәр итеп һөйләгән һүҙ.

**2.** (*баш хәреф менән*) Ир-ат исеме.

□ **Баян итеү** (*йәки* **ҡылыу**) хәбәр итеп һөйләү. *Әбей Күсәк батырҙың кайһы ырыуҙан икәнен баян ҡылган.* «Бабсаҡ менән Күсәк».

♦ **Баян талаҡ** *кар.* **талаҡ**[3].

**БАЯНИСТ** [*рус.*] *и. кар.* **баянсы.**

**БАЯНСЫ** *и.* Баянда уйнаған музыкант. *Баянсылар ансамбле. Баянсылар сыгышы.*

**БАЯР** [*рус.* боярин] *и. тар.* **1.** Мәскәү Русында (башта бүләк, аҙағырак мираҫ итеп бирелә торған) юғары дәрәжә һәм шул дәрәжәләге кеше.

**2.** Боронғо Руста һәм Мәскәү дәүләтендә эре ер биләүсе, юғары ҡатлам феодалдарҙың вәкиле; алпауыт. *Беҙ Сәрби еңгәм менән йәй буйы баярга ашлыҡ урып, көҙ буйы байҙарга көнләккә иген һугып, кышка табан Һибәт агайҙың ауылына ҡайттыҡ.* Д. Юлтый.

**БАЯРЛАУ** *к. диал.* Тәғәйенләү, арнау. *Баярлап ҡуйыу. Малды балаларга баярлап аҫрау.*

**БЕГЕМОТ** [*рус.*] *и.* Экваториаль Африканың йылға, күл буйында була торған бик ҙур башлы, яланғас тәнле, айыры тояҡлы эре һөтимәр хайуан; һыу айғыры.

**БЕҘ**[1] **(беҙҙең, беҙгә, беҙҙе, беҙҙән, беҙҙә)** *зат а.* Һөйләүсе һәм уның менән бергә булған бер нисә шәхесте белдерә. *Беҙ Зөләйхә менән икәүләп торҙок та калдыҡ.* Т. Йәнәби. *Хужа беҙҙең арттан сыҡты. Беҙҙе ситкәрәк алып китеп, мәсьәләне аңлатырга башланы: — Минең һеҙгә һүҙем юҡ. Рәхмәт, ярҙам иттегеҙ.* Д. Юлтый. *Өфө... Уның тураһында беҙҙә йыр йырлайҙар.* С. Агиш.

**БЕҘ**[2] *и.* **1.** Сәнсеп тишә торған эш ҡоралы. *Йыуан беҙ. Нәҙек беҙ. Кәкре беҙ.*

**2.** Ҡырҡа торған ҡоралдарҙың үткер яғы; йөҙ. *Балта беҙе. Бысаҡ беҙе. Ҡылыс беҙе. Салгының беҙе ҡайтҡан.*

● *Беҙ капсыкта ятмай.* Мәҡәл.

**БЕҘЕНКӘЙ** *и. иҫк. астр.* Етегән йондоҙ. *Беҙенкәй етәү. Өлкәр нисәү? Һары ат менән буҙ ат тик икәү* (Халыҡ йырынан).

**БЕҘЛӘҮ** *к.* Бәләкәй генә булып, беленер-беленмәҫ кенә яҡтырыу. *Биктимер урманга кереп китә. Эскәрәк үткәс, беҙләп кенә янган бер ут күренә* (Әкиәттән).

**БЕҘӘЛЕК** *и. диал.* Беләҙек.

**БЕҘӘЛӘҮ** *к. кар.* **беҙәү.** *Күсәк бей Ҡарагөләмбәттең танауын беҙәләп, үгеҙ кеүек итеп алып китте.* «Бабсаҡ менән Күсәк».

**БЕҘӘНӘК** *и. диал.* Безгәләк.

**БЕҘӘҮ** *к.* Осло нәмәне нимәгәләр сәнсеү, осло нәмә менән тишеү; ҡаҙау. *Ҡалдырҙым да бысағымды ергә беҙәп, күл ягына киттем укты әҙләп.* „Ерәнсә сәсән“.

**БЕЖЕК** *и. диал.* Өйрәк суҡышы.

**БЕЗ, безз** *окш.* Серәкәй кеүек ваҡ бөжәк тауышын белдергән һүҙ. *Безз итеү. Без килеү.*

**БЕЗ-БЕЗ** *окш.* Ҡабат-ҡабат без иткәнде белдергән һүҙ.

**БЕЗГӘЛӘК** *и. кар.* **энәгараҡ.**

**БЕЗЕЛДӘК** [1] *с.* **1.** Без-без иткән, без-без килгән. *Безелдәк серәкәй.*

**2.** *күсм.* Тыз да мыз итеп торған; тызылдаҡ.

♦ **Безелдәк ҡамыш** *кар.* **ҡоланҡойроҡ.**

**БЕЗЕЛДӘК** [2] *и.* **1.** *кар.* **сүрәкә** [2].

**2.** *диал.* Өй сиңерткәһе.

**БЕЗЕЛДӘҮ** [1] *к.* **1.** Без-без итеү, без-без килеү. *Улар [ҡорттар] буҫкәләренә бал тейәгән, безелдәп кәрәҙҙәргә үрмәләй.* Ф. Исәнғолов.

**2.** *күсм.* Тыз-мыз килеп сыйылдау (күберәк бала-сағаға ҡарата).

**БЕЗЕЛДӘҮ** [2] *к.* **1.** Еңгән яҡ күрһәткән араны тын алмай йүгереп үтеү.

**2.** Ҡойроҡ сәнсеп, уҡранан ҡасыу (һыйыр малына ҡарата).

**БЕЗЕЛДӘШЕҮ** *к. урт. кар.* **безелдәү** [1].

**БЕЗЛӘК** *и. диал.* Һуҡыр шәм.

**БЕЗЛӘҮ** *к.* **1.** Без-без итеү, без-без килеү. *Серәкәй безләүенән башка өн әҫәре сыкһасы.* «Совет Башҡортостаны», 1968, 5 март.

**2.** *диал.* Сәнскәкләү.

**БЕЗӘ-БЕЗӘ** *сакр.* Быҙау саҡыра торған һүҙ.

**БЕЗӘҮКӘЙ** *и. бал.* Быҙау.

**БЕЙ** *и.* **1.** *иҫк.* Ырыуҙың затлы кешеһе. *Ырыу яҙмышын яклап һуғышырға тура килгәндә, шул уҡ бейҙәр гәскәр башлыгы булып китә.* К. Мәргән.

**2.** Баш кеше; башлыҡ, түрә. *Китте Иблис бей булып, әмир булып, остаз булып.* Ш. Бабич. *Мәсем хан .. Ҡарагөлөмбәт эшен раҫка һанап, ун ике бей өҫтөнән бей кылмаҡ була.* «Бабсаҡ менән Күсәк».

**3.** Ирҙәргә хөрмәт менән өндәшә торған ололау һүҙе. *Айҙар бей. Буранғол бей.*

**БЕЙ-БАШТАҠ** *с. диал.* Башбаштаҡ.

**БЕЙЕГӘЙЕҮ** *к.* Берәй нәмәнең бейеклеге артыуы, бейек булыу. *Кәбән бейегәйгән. Эҫкерт бейегәйә төшкән. Бейегәйә барыу.*

**БЕЙЕГӘЙТЕҮ** *к.* Берәй нәмәнең бейеклеген арттырыу, бейек итеү. *Сөгөлдөр ташыганда ҡойолмаһын өсөн машина кузовтарының ян-ягын бейегәйтеү.*

**БЕЙЕК** *с.* **1.** Түбәндән юғарыға үлсәме ҙур; киреһе тәпәшәк. *Бейек ҡойма. Бейек өй. Бейек өҫтәл. Бейек тау. Бейек яр. Бейек итеп һалынган яр. // Бейек үҫкән үлән.* ■ *Бейек кенә агас менеп булмай, кулдарыңда кирәм булмаһа* (Халыҡ йырынан).

**2.** Ҡайһылыр бер кимәлдән ныҡ юғары. *Бейек ер.* ■ *Беҙҙең Ватан .. алыҫ диңгеҙҙәрҙе бергә куша, кутәрелә бейек һауага.* Ғ. Сәләм.//*Бейектән оса ҡоҙгон ҡош, унан бейек осор ыласын бар.* Салауат Юлаев.

**БЕЙЕКЛЕК** *и.* **1.** Аҫтан өҫкә тиклем ике араланы алыҫлыҡ. *Бейеклеккә һикереү. Йорттоң бейеклеге ун метр. Кеше бейеклеге үлән. Күк шыршының бейеклеге 45 метрга етә.* ■ *Ат үрәпсеп өй бейеклеге һикергән* (Әкиәттән).

**2.** Ер өҫтөнән ныҡ юғарыла булған арауыҡ. *Карагоштар алты-ете мең метр бейеклеккә тиклем оса.* ■ *Бейеклектәр эҙләй халкым өсөн, киң йыһанга һыймай тарһына .. йөрәк ярһына.* Т. Йәнәби.

**3.** *кар.* **ҡалҡыулыҡ.**

**БЕЙЕКЛӘҮ** *к. кар.* **бейегәйтеү.**

**БЕЙЕМ** *и. диал.* Ҡәйнә. *Тагы япа-яңгыҙ калыуына эсе боша ине Зөлхизә әбейҙең. „Оҙакка түгел бит, бейем, Айрат ни кунакка килгеләп торор әле“,— тип йыуатты уны килене.* Н. Мусин.

**БЕЙЕТЕҮ** *к. йөкм. кар.* **бейеү** [1].

**БЕЙЕҮ** [1] *к.* **1.** Көй ыңғайына кәүҙә, аяҡ-ҡулдар менән матур, нәфис хәрәкәттәр яһау. *Оҫта бейеү. Яңгыҙ бейеү. Ҡара-каршы бейеү. Ҡурайга бейеү. Бейергә төшөү.* ■ *Вальс. Ғаяз менән Гөлнар бейеп китә. Туктауһыҙ әйләнәләр.* Ә. Мирзаһитов.

**2.** *күсм.* Бер урында тороп сыҙамай, тыпырсыныу. *Минең көрән ат бейеп, уйнап тора, өҫтөндә ултырырлыҡ түгел.* Д. Юлтый.

**3.** *күсм.* Йыш-йыш итеп бер урынға төшөү. *Түбә калайында ямгыр тамсылары бейей.* ■ *Старшина, мулла, байҙар ҡамсыһы башкорт халкының ярлыһының сикәһендә күп бейегән.* И. Абдуллин.

♦ **Бейеп тороу** (*йәки* **йөрөү**) ярарға йәки һәр әйткәнде үтәргә тырышып, һикереп төшөп тороу. *Шәхми бай бөгөн Ғәләү эргәһендә бейеп кенә йөрөй.* Т. Йәнәби. **Кемдендер ҡурайына бейеү** *кар.* **ҡурай.**

**БЕЙЕҮ** [2] *и.* Көй ыңғайына башҡарылған матур, нәфис хәрәкәт (ғәҙәттә берәй эш процесын, уй, тойғоно, күренеш һ. б. сағылдыра). *Күмәк бейеү. Яңгыҙ бейеү.* ■ *Башкорт халкының бейеү сәнгәтен театр сәхнәһенә беренсе башлап Ғиниәт Ушанов күтәрҙе.* «Совет Башҡортостаны», 1965, 31 ғинуар.

**БЕЙЕҮСЕ** *и.* Бейей белгән кеше; бейеү оҫтаһы. *Бейеүселәр ансамбле.* ■ *..Бейеүсе ергә бәрелгән футбол тубы кеүек һикерә-һикерә әйләнә, иҙәндә бер аягына тубыкланып, икенсеһен турага һуҙган килеш, өйөрөлә башланы.* Ә. Вәли. *Бейеүсенең итәгенә алма биҙәге төшкән. Бейеүсегә һүҙ әйтмәгеҙ яңы бейергә төшкән* (Халыҡ йырынан).

**БЕЙЕШЕҮ** *к. урт. кар.* **бейеү** [1]. *Гөлйөҙөм менән Яланбикә уҙҙәре таҡмак әйтеп, уҙҙәре бейеште.* Һ. Дәүләтшина.

**БЕЙӘ** *и.* Инә йылҡы малы. *Һауын бейә. Быуаҙ бейә. Ҡолонло бейә. Тыу бейә. Бейә һөтө. // Бейә ҡолон.* ■ *Йәйләүҙә өс көн торгас та, буҙ бейә үҙе төҫлө матур бер айгыр ҡолон ҡолонлаган* (Әкиәттән).

♦ **Бейә бәйләү** бейә тотоп, ҡымыҙ эшләү. **Бейә күнәге** *диал.* башкүнәк.

**БЕЙӘЛӘЙ** *и.* Баш бармағын ғына айырым сығарып эшләгән ҡул кейеме. *Брезент бейәләй. Йорон бейәләй. Йөн бейәләй. Күн бейәләй.*

*Бейәләй бәйләү. Бейәләй тегеү. Бейәләйһеҙ йөрөү.* ■ .. *Ғәлиәкбәрҙең өҫ-баш та бик гәп бит инде. Ҡараҡул яғалы өр-яңы пальто, ҡараҡул бүрек,.. ҡулда күн бейәләй, муйында сағыу шарф.* З. Биишева.

**БЕКОН** [*рус.* ⟨ *ингл.*] *и.* Әҙ генә тоҙлап, махсус ысул менән эшкәрткән суҫҡа ите.

**БЕЛГЕР** *с. диал.* Белдекле.

**БЕЛГЕРТЕҮ** *ҡ.* **1.** Кемгәлер бер нәмәне һиҙҙереү; белдереү. *Хәлде белгертеү.* ■ *Әскенәйе тулы ут булһа ла сер белгертмәҫ егет уяуы* (Халыҡ йырынан).

**2.** Кемгәлер бер нәмәне хәбәр итеү; еткереү. *Саҙрислам юл ыңғай .. ауылына һуғылып, ҡайҙа бараһын аталарына белгертеп сыҡты.* Ф. Иҫәнғолов.

**3.** Ниҙелер белерлек итеп танытыу; күрһәтеү. *Көсөңдө белгертеү. Эшләй алғаныңды белгертеү.*

**БЕЛГЕС** *и.* Фән йәки техниканың бер тармағы буйынса махсус белемгә эйә булған кеше. *Квалификациялы белгес. Ауыл хужалығы белгесе.* ■ *Сәйҙел уҡыу бөтә, төҙөлөштәргә яңы белгес булып китер ул.* Ғ. Сәләм.

**БЕЛДЕК: үҙ белдегең менән** үҙең белгәнсә, үҙең теләгәнсә. *Үҙ белдегең менән йөрөү.* ■ *Хәҙер урман да йылдан-йыл һирәгәйә, йәнлеккош та кәмей. Һәр кем, башбаштаҡлыҡ ҡылып, үҙ белдеге менән ағас ҡырҡа, урт һалып урманды яндыра.* М. Тажи.

**БЕЛДЕКЛЕ** *с.* **1.** Аңлап эшләй белгән, әйткәнде ала белгән. *Белдекле кеше.*

**2.** Үҙен бик белгән итеп күрһәтергә тырышҡан кешегә шелтә менән әйтелә. *Белдекле булып ҡыланыу.*

● *Белдеклегә бер һүҙ ҙә күп, белдекһеҙгә сукмар ҙа суп.* Әйтем.

**БЕЛДЕКҺЕҘ** *с.* Аңлап эшләй белмәгән, әйткәнде ала белмәгән. *Белдекһеҙ кеше.*

● *Белдеклегә бер әйтһәң дә йөрәгенең эсендә, белдекһеҙгә мең әйтһәң дә ҡолағының тышында.* Әйтем.

**БЕЛДЕМ: белдем баш** үҙен бик белгәнгә һанаған кешегә ҡарата әйтелә. *Ҡарт сәпсек әтәстең былай артыҡ белдем баш булып һөйләүенә бик хурланды.* Ғ. Бағданов.

**БЕЛДЕРЕЛЕҮ** *ҡ. төш. ҡар.* **белдереү** [1].

**БЕЛДЕРЕҮ** [1] *ҡ.* **1.** Кемгәлер бер нәмәне хәбәр итеү; еткереү. *Гөлбоҫтан еңгәнен был ҡыуаныс-ты әллә кемдәргә белдереп уртаҡлашҡыһы килде.* Ғ. Дәүләтшин. *Булар хандың сапҡындары хәлде бөтә тирә-яҡҡа белдереп ҡайтты, ти.* «Алпамыша»./Кемгәлер бер нәмәне иғлан итеү. *Сәлмән ағай: «Зөләйхә туташ, танышығыҙ, беҙҙең пекарь Самсон»,— тип, минең титулды ла белдереп ҡуйҙы.* Т. Йәнәби.

**2.** Берәй төрлө ҡараш, мөнәсәбәтте мәғлүм итеү. *Протест белдереү. Ризалыҡ белдереү. Теләк белдереү. Үпкә белдереү.*

**3.** Кемгәлер бер нәмәне һиҙҙереү; белгертеү. *Зөлхизә был уйын бер кемгә лә белдермәй.* З. Биишева. *Үҙенә белдермәй генә [Йәнтимерҙең] артынан эйәрҙем.* С. Агиш.

**4.** Ниҙер аңларлыҡ итеп һиҙҙереү; күрһәтеү. *Старостаның ҡурҡыныслы, ауыр айырылыу минуттарын белдергән тауышы бөтәһен дә туҡтатты.* Һ. Дәүләтшина.

**БЕЛДЕРЕҮ** [2] *и.* **1.** Ниҙер хаҡында мәғлүм итеп эленгән яҙма; иғлан. *Белдереү яҙыу. Белдереү элеү. Белдереү уҡыу.*

**2.** Ҡәтғи рәүештә мәғлүм ителгән рәсми хәбәр. *Хөкүмәт белдереүе. Белдереү яһау.*

**БЕЛДЕРМӘ** *и.* Ниҙер тураһындағы хәбәр; мәғлүмәт. *Бандиттар бында ҡуна ҡалһа, Сусаҡ тауҙың төньяҡ һарҡыуына ут яғырға. Өҫтәмә белдермәләрҙе Истебай таң менән һыйыр көтөүен йыйырға килгәндә алып килә.* Һ. Дәүләтшина.

**БЕЛДЕРТЕҮ** *ҡ. йөкм. ҡар.* **белдереү** [1].

**БЕЛЕ** *и. шул уҡ* **беле өйрәк** (*ҡар.* **өйрәк** 1).

**БЕЛЕК** *и.* **1.** *иҫк. ҡар.* **белем.**

**2.** Үҙ аңың менән белеп, аңлап эш итеү һәләте.

● *Биртенгәндән белек китер.* Мәҡәл.

**БЕЛЕКЛЕ** *с.* **1.** *иҫк.* Белемгә эйә; белемле, уҡымышлы. *Ҡараһаҡал .. заманаһының иң белекле муллаларының береһе булған.* Ғ. Фәхретдинов.

**2.** Аңлап эшләй белгән, әйткәнде ала белгән; белдекле. *Миңә больницаға барырға кәрәк икәнен ул [Диаров] күптән белә. Белекле кеше булһа, мин һорамай, үҙе ебәреү яғын ҡайғыртыр ине.* «Ағиҙел», 1971, № 3.

**БЕЛЕКҺЕҘ** *с.* **1.** *иҫк.* Белемгә эйә түгел; белемһеҙ, уҡымышһыҙ.

**2.** Аңлап эшләй белмәгән, әйткәнде ала белмәгән; белдекһеҙ.— *Ишекте бикләп йөрө тип күпме әйтәһең, ҡолағына ла элмәй белекһеҙ.* Н. Мусин.

● *Күҙһеҙҙең күҙе һуҡыр, белекһеҙҙең күңеле һуҡыр.* Әйтем.

**БЕЛЕМ** *и.* **1.** Уҡыу йәки тәжрибә нигеҙендә тупланған мәғлүмәт. *Дөйөм белем. Политехник белем. Урта белем.* ■ *[Нигмәтулла] үҙ фамилияһын яҙырлыҡ та белеме булмаған көйө ҡулына ҡәләм алды. Өҫтәлдәге ҡағыҙға әллә ниҙәр сыймаҡла[ны].* Я. Хамматов.

**2.** Кешенең бөтә тәбиғәт, йәмғиәт тураһында быуын-быуындан туплай килгән мәғлүмәттәре; ғилем. *Йәмғиәт белеме. Тәбиғәт белеме.* ■ *Беҙҙә бөйөк бер белем бар, ленинизм ул белем. Йылдарҙың иң йырағын да күрһәтә ошо ғилем.* Р. Ниғмәти. *Ап-асыҡ тор һәр ваҡытта, эй китап, баҡһам һиңә; сын асыл нигеҙле ерҙән күп белемдәр бир миңә!* Ш. Бабич.

**БЕЛЕМЛЕ** *с.* Ҙур белемгә, мәғлүмәткә эйә; уҡымышлы, ғилемле. *Белемле кеше.*

● *Белемле үлмәҫ, белемһеҙ көн күрмәҫ.* Мәҡәл. *Тубылғы ҙур булмаҫ, белемле хур булмаҫ.* Мәҡәл.

**БЕЛЕМСЕ** *и. диал.* **1.** Белем эйәһе.

**2.** Бағымсы, имсе.

**БЕЛЕНДЕРЕҮ** *ҡ. ҡар.* **белгертеү** 1. *Марттың үткер еле, ҡар битен ашап, белендермәй генә иретә.* Һ. Дәүләтшина.

**БЕЛЕНЕҮ** *ҡ.* **1.** Һиҙеү тойғоһона тәьҫир итеү; һиҙелеү, тойолоу. *Көсләп-көсләп өсәр ҡабат һөгондоролғандан һуң тәүҙә үтмәй торған һимеҙ иттең бөткәне лә беленмәй ҡалды.* Ғ. Дәүләтшин.

**2.** Эш-хәлдең төп мәғәнәһе, асылы билдәләнеү; асыҡланыу./Билдәле булыу; танылыу.

**3.** Күрер күҙгә һиҙелеү; күренеү. *Ул [кыҙ] итекселәргә .. йөйө лә беленмәгән бер һыңар ката тегергә кушып китте, ти* (Әкиәттән).

● *Батыр яуҙа беленер, сәсән дауҙа беленер.* Әйтем. *Кырын эш кырк йылдан да беленә.* Мәкәл.

**БЕЛЕҮ** *к.* **1.** Кем йәки ниҙер хакында мәғлүмәтле йәки хәбәрҙар булыу. *Исемде белеү. Уй-теләкте белеү. Хәлде белеү.* ■ *Барсынһылыуҙың һөйгәнен белеп йөрөгән Алпамыша.* «Алпамыша».

**2.** Ниҙеңдер асылына төшөү; аңлау, төшөнөү. *Кайҙа алып киттеләр, ни эшләргә баралар — белмәй Нурулла.* Ш. Янбаев. *Кыҙ уның Камыр батыр икәнен белеп калған* (Әкиәттән).

**3.** Үҙләштереп, аң-зиһендә тотоу; мәғлүмәтле булыу. *Телде белеү. Тормошто белеү. Эште белеү.*/Аңлауға һәләтле булыу. *Мин аҙ ғына хәтерләйем: мин белгәндә беҙҙең бер тайыбыҙ, бер һыйырыбыҙ бар ине.* Т. Йәнәби.

**4.** Күреп таныу, таныш булыу. *Мин әле һеҙҙе, ғәфү ит, белмәйем, һеҙ кем туташ?* Ш. Бабич.

**5.** *күбр. юкл.* Тормошта кисереү, күреү. *Сигенеүҙе белмә, куркыуҙы белмә; дошмандың һис бер еңеүен күрмә.* М. Хәй. *Тирә-якта дан тоткан был [Акназар] һунарсы, йәнлеккә яҙа атыуҙы, өйөнә буш кайтыуҙы белмәгән* (Әкиәттән).

**6.** Хәл кылымдың *-а/-й* формаһындағы һүҙ менән ярҙамлык сифатында килеп, ниҙелер булдыра алыуҙы белдерә. *Каранан акты айыра белеү. Йөҙә белеү.*

♦ **Бар тип белеү** иҫәпкә алыу. *[Карттар:] Һай-һай, замана кайҙа таба китте! Йәштәрҙе әйтсе әле: байын, түрәһен бар тип тә белмәй.* Һ. Дәүләтшина. **Белһәң ине** инеш һөйләм функцияһын үтәй. *Белһең ине, миңә шул хәтле кыйын.*

● *Ашаған белмәй, тураған белә.* Мәкәл. *Белгән белеменә ышаныр, белмәгән беләгенә ышаныр.* Әйтем. *Өрә белмәгән эт өйөнә бүре килтерә.* Әйтем.

**БЕЛЕШ** *и.* Башкорттоң аралашып йөрөгән рус дуҫы. *Ваһап карт тарыны быйыл белешенән сәстерҙе. Евстафий сәскән тары .. яр кеүек булып уңды.* Ж. Кейекбаев.

**БЕЛЕШЕҮ** *к.* Кем йәки нимә хакында һорашып, мәғлүмәт алыу; һорашыу. *Хәл белешеү. Эш белешеү.* ■ *Атайым, Хәмит ағай эргәһенә барып, кайһы ылауға ултырырға икәнен белешкәс, тогон арбаға илтеп һалды.* Н. Мусин.

**БЕЛЕШМӘ** *и.* **1.** Кем йәки нимә хакындағы мәғлүмәт. *Белешмә алыу. Белешмә биреү. Белешмә бүлеге.* ■ *Мәғрифәт эшенә өлөш индергән был китапсыларҙың күбеһе үҙҙәре хакында бер төрлө лә белешмә калдырмаған.* Ә. Харисов.

**2.** Эш-хәл хакында кыҫкаса мәғлүмәт биргән эсбап.//*Белешмә әҙәбиәт.*

**БЕЛЛЕТРИСТ** [*рус.*] *и.* Беллетристик әҫәрҙең авторы.

**БЕЛЛЕТРИСТИК** *с.* Беллетристикаға мөнәсәбәтле. *Беллетристик стиль. Беллетристик әҫәр.*

**БЕЛЛЕТРИСТИКА** [*рус.* ⟨ *фр.*] *и.* Проза менән яҙылған әҙәбиәт.

**БЕЛМӘМЕШ: белмәмеш булыу** *йәки* **белмәмешкә һалышыу** белмәгән кеше булып кыланыу.

**БЕЛОРУС** *и.* **1.** Белоруссияның төп халкын тәшкил иткән милләт һәм шул милләттең бер кешеһе (славян телдәренең береһендә һөйләшә). *Белорус катыны. Белорус теле.*

**БЕЛОРУССА** *р.* **1.** Белорус телендә. *Белорусса белеү.*

**2.** Белорустар кеүек, белорус халкына хас. *Белорусса кейеү.*

**БЕЛУХА** [*рус.*] *и.* Поляр дельфин (олоһоноң корһак аҫты ак була).

**БЕЛЬГИЙ** *и.* Бельгияның төп халкы һәм шул халыктың бер кешеһе. *Бельгий халкы.*

**БЕЛЬЭТАЖ** [*рус.* ⟨ *фр.*] *и.* Тамаша залында амфитеатрҙан үрҙәге беренсе ярус. *Бельэтаж ложаһы.* ■ *Партер ҙа, бельэтажда тамашасы менән тулы.* Ш. Янбаев.

**БЕЛӘҘЕК** *и.* **1.** Катын-кыҙҙың беләккә кейә торған биҙәүесе. *Алтын беләҙек, Көмөш беләҙек. Кашлы беләҙек. Суклы беләҙек.* ■ *Алтын алка колакта, куш беләҙек беләктә* (Халык йырынан)./Күлдәктең ең осондағы тар өлөш. *Төймәле беләҙек. Кайтармалы беләҙек.*

**2.** *диал. кар.* **кушкар**[1] 1. *Беләҙек һөйәге. Беләҙек быуыны.*

**БЕЛӘК** *и.* **1.** Кулдың иңбаштан кушкарға тиклемге өлөшө. *Йыуан беләк. Көслө беләк.* ■ *Аклы ситса күлдәгемдең еңе тар беләгемә* (Халык йырынан).

**2.** Машинаның әйләндерә торған тоткаһы. *Елгәргес беләге. Сепаратор беләге.*

**3.** Капкандың яҫы коростан бөгөп куйған пружинаһы. *Капкан беләге.*

♦ **Тын беләк** эшкә өйрәнгән көслө кешегә карата әйтелә.

**БЕЛӘКЛӘНЕҮ** *к.* Йыуан һәм йомро булыу. *Кузьмин баяр .. елкәһендәге беләкләнеп яткан майы бөкләнмәһен тигән кеүек, муйынын бормай, тотош кәүҙәһе менән борола.* Һ. Дәүләтшина.

**БЕЛӘКСӘ** *и. диал.* **1.** *кар.* **еңсә**[1] 1.— *Беҙҙең Сәлимә бик еңел куллы, ул башлаһын, ти әсәйем, үҙе беләгенә беләксә кейә.* М. Ғафури.

**2.** *кар.* **кушкар**[1] 1.

**БЕЛӘ-КҮРӘ** *р.* Белә тороп, белгән көйө. *[Карамырҙа:] Бер ярлыға биреп, үҙ кыҙыңды, белә-күрә харап итмәҫһең.* Х. Ғәбитов.

**БЕЛӘН** *бәйл. һөйл.* Менән.

**БЕЛӘНЛЕК** *и. диал.* Намаҙлык.

**БЕЛӘҮ**[1] *к.* Кайрап үткерләү.

● *Үтмәҫте беләмә, булмаҫты һөйләмә.* Әйтем.

**БЕЛӘҮ**[2] *и.* Бәкенең йөҙөн килтерә торған йомшак кайрак.

**БЕЛӘҮ**[3] *и. диал.* Мәләү.

**БЕЛӘҮЛӘНЕҮ** *к.* **1.** *төш. кар.* **беләүләү.**

**2.** *күсм.* Кайышланып ялтырау. *Беләүләнеп бөткән керле кейем.*

**БЕЛӘҮЛӘТЕҮ** *к. йөкм. кар.* **беләүләү.**

**БЕЛӘҮЛӘҮ** *к.* Беләүгә үткерләү. *Ғатаулла .. бәке йөҙөн бармак бите менән сыйыртып карағас, тырышып беләүләргә, кайышка янырға тотондо.* Й. Солтанов.

**БЕНГАЛ** *и.* Бангладеш һәм Һиндостан халкының бер өлөшөн тәшкил иткән милләт һәм шул милләттең бер кешеһе. *Бенгал халкы.*

♦ **Бенгал уты** сағыу аҡ йәки төрлө төҫ менән янған пиротехник состав һәм фейерверк уты үҙе.

**БЕНЕФИ́С** [*рус.* ⟨ *фр.*] *и.* Артистың талантын ололау йөҙөнән уның исеменә ҡуйылған спектакль./Билдәле бер артист файҙаһына ҡуйылған спектакль. *Ҙур артистар бенефис ҡуйып, күп аҡса алып, кейенә, төрлө бүләк ала.* Ғ. Минһажев.

**БЕНЗИ́Н** [*рус.* ⟨ *фр.*] *и.* Нефтте ҡыуғанда алынған төҫһеҙ шыйыҡ яғыулыҡ. *Бензин еҫе. Авиация бензине.*

**БЕНЗО́Л** [*рус.* ⟨ *фр.*] *и.* Үҙенсәлекле еҫле, тиҙ осоусан төҫһеҙ, утҡа шартлап барыусан шыйыҡлыҡ (буяу, лак, шартлатҡыс матдәләр һ. б. яһағанда ҡулланыла).

**БЕНУА́Р** [*рус.* ⟨ *фр.*] *и.* Ложаларҙың партер кимәлендәге ярусы. *Бенуар ложаһы.*

**БЕР** *төп һ.* **1.** 1 һаны. *Бергә бишӗе ҡушыу.*/Кем йәки нәмәнең 1-гә тиң иҫәбе. *Бер ат. Бер арба. Бер айлыҡ эш хаҡы. Бер сынаяҡ сәй. Бер телем икмәк. Айына бер ултырыш. Бер сажымға бер бағана. Биш йылға бер план.* ■ *[Сәүиә] сөм ҡара оҙон сәсен йыуан итеп берҙән үргән.* Ф. Иҫәнғолов./Нумератив һүҙҙәр менән нәмәләрҙең миҡдарын йәки йыйынһын белдерә. *Бер келәт ашлыҡ. Бер табаҡ аш.* ■ *[Ҡарт:] Мин, бисара, үҙем бик ҡарт, үҙем ярлы, аҫрау еңел түгел бит бер өй йәнде.* М. Ғафури.

**2.** Күп эсендәге яңғыҙға айырым баҫым яһағанда ҡулланыла. *[Айбулат:] Бер Ныязгол ҡайҙа бара!* Һ. Дәүләтшина. *[Сәлих:] Бер Йәләлетдингә генә түгел башҡаларға ла шик төштө.* С. Агиш.

**3.** Башҡаларҙан айырылып торған, берҙән-бер. *Димләгеҙ ҡыҙҙың уңғанын, колхозда бер булғанын.* Ҡ. Даян. *Салауат батыр ир ине, менгән аты кир ине. Дошман менән алышҡанда, ил эсендә бер ине* (Халыҡ йырынан).

**3.** *эйл. ф.* **бергенәм** Яратып, иркәләп әйтелә. *Һин бит минең бергенәм.*

**4.** Ниҙҙәр күмәк өсөн уртаҡ булғанлығын, дөйөмлөгөн белдерә. *Бер һүҙгә килеү.* ■ *Мәскәүҙән һуң пионерҙар менән бер вагонда барҙы Сәйҙелдәр.* Ғ. Сәләм./Сифат йәһәтенән ниҙеңдер икенсе нәмә менән тиң икәнен белдерә. *[Әхмәтҡол:] Бурылды егегеҙ. Алпамыша менән бер ул. Нәҡ һабан аты.* Ш. Шәһәр.

**5.** *билдһ. а. мәғ.* Исемгә билдәһеҙлек, конкретһыҙлыҡ мәғәнәһе бирә. *Бер ваҡыт. Бер ер. Таныш бер ауыл. Хәтәр бер эш.*//*Бере булһа, бере булмай.* ■ *— Мөмкинме? — тип колхоз идараһына бер кеше килеп инде.* М. Тажи. *[Айбулат:] Ағай, һинең мине тыйырға бер хаҡың да юҡ.* Һ. Дәүләтшина. *Өйөп киткән утын урынында күгәреп ятҡан көлдән башҡа бер нәмә лә юҡ, ти* (Әкиәттән). *Заманаға заман уралған, берәү бәхетен бере алған* (Ҡобайырҙан)./Ҡайһы бер сифат һәм рәүештәр менән килеп, саманы, конкретһыҙлыҡты белдерә. *Бер аҙ. Бер ауыҡ. Бер ни тиклем. Бер ҡауым.* ■ *Ғамирҙың былай тыныс ҡына ҡаршы алыуы Фәхриҙе бер талай һыуындыра төштө.* Б. Бикбай.

**6.** Бар булған кешеләрҙең йәки нәмәләрҙең һәр ҡайныһына баҫым яһағанда ҡулланыла.— *Осраған бер кешенән анкета тултырып булмай.* С. Агиш. *Уралып ятҡан Уралда .. теләгән бер януар бар* (Ҡобайырҙан).

**7.** *р. мәғ.* Юҡлыҡ формаһындағы хәбәр менән килеп, көсәйтеү мәғәнәһен белдерә; һис. *Бер һөйләргә ирек бирмәй. Бер тыңламайһың.*

**8. бер..., бер...** *терк. мәғ.* Аллы-артлы теҙеп биргәндә йәки ҡаршы ҡуйғанда ҡулланыла. *Бер алға, бер артҡа китеү. Бер инеп, бер сығып йөрөү. Бер мин, бер ул.* ■ *Ҡала урамынан бер тегеләй, бер былай үткән халыҡты ҡарап, тупһала ултырабыҙ.* Т. Йәнәби.

**9.** *и. мәғ.* Биш баллы баһа системаһындағы иң насар билдә. *Бер ҡуйыу. Бер алыу.*

♦ **Бер аҙҙан** аҙыраҡ ваҡыт үткәс. *Тимербулат бер өйгә барып ингән. Тәүҙә унда бер кем дә булмаған. Бер аҙҙан бер ҡарт килеп сыҡҡан* (Әкиәттән). **Бер булыу** 1) уртаҡ уй, ҡарашлы булыу, берләшеү. *Эшләйҙәр күмәкләп, ер тулып, эшсе һәм игенсе бер булып.* Ғ. Сәләм; 2) аптырап бөтөү, дыу килеү. *Айғырҙы таба алмай бер булалар.* Ж. Кейекбаев. **Бер ҙә** һис тә. *Бер ҙә белмәйем. Бер ҙә күргәнем. юҡ. Бер ҙә оҡшамай. Бер ҙә уйламаған ерҙән.* **Бер итеү** дыу килтереү. *Аҡ бәрәстәр менән саптым, аҙбар алдын бер итеп.* Ш. Бабич. **Бер көйө** ғәҙәттәгесә, үҙгәрешһеҙ. *Бер көйө йәшәп ятыу.* **Бер тигән** бик шәп. **Бер тип тә** бер һүҙ ҙә. *Бер тип тә өндәшмәү.* **Ғүмергә бер** берҙән-бер тапҡыр. *Ғүмергә бер баҙарға барып, унда ла уңмай ҡайттым.* **Онотҡанда бер** *йәки* **эллә ниҙә бер** *ҡар.* **онотоу.** *Онотҡанда бер килеү.*

● *Бер төкөрһә, ни итер, күп төкөрһә, күл итер.* Әйтем. *Ил ауыҙы иләк менән бер.* Әйтем.

**БЕР-БЕР** *с.* Ниндәй ҙә булһа бер; берәй. *Бер-бер кеше. Бер-бер хәбәр. Бер-бер эш.*

♦ **Бер-бер артлы** бер туҡтауһыҙ, береһе артынан икенсеһе. *Бер-бер артлы һорау биреү.*

**БЕР-БЕРЕ, бер-береһе** *билд. а.* Ике аралағы мөнәсәбәтте белдерә; үҙ-ара. *Бер-береңдә ҡурсау. Бер-береңдә яратыу.* ■ *Егет менән ҡыҙ, бер-береһенә ҡарашып, ҡатты ла ҡалды, ти* (Әкиәттән).

**БЕР-БЕРӘҮ** *и.* Берәй кеше. *Бер-берәү ишетеп ҡалмаһын.*

**БЕРБЫУЫН** *и. мат.* Ҡабатлау һәм дәрәжәгә күтәреү ғәмәлдәрен генә эсенә алған алгебраик аңлатма. *Бербыуынды дәрәжәгә күтәреү.*

**БЕРГӘ** *р.* **1.** Үҙ-ара берлектә; айырым түгел. *Бергә ашау. Бергә барыу. Бергә тороу. Бергә эшләү.*/Үҙ-ара ҡатнашлыҡта. *Исмәғил менән Хөсәйен — бәләкәйҙән бергә йәшәп килгән ике дуҫ.* Һ. Дәүләтшина.

**2.** Бер үк ваҡытта, бер юлы. *Ҡояш менән ятҡан малайҙар әтәс менән бергә торалар.* Ғ. Амантай.

♦ **Шуның менән бергә** шул уҡ ваҡытта. *Ҡулдар ҡалтырай, шуның менән бергә дөпдөп һуҡҡан йөрәк тауышы минең ҡолаҡҡа ишетелә.* Д. Юлтый.

● *Яҡшы менән бергә булһаң — ундың, яман менән бергә булһаң — туңдың.* Әйтем.

**БЕРГӘЛӘП** *р.* Үҙ-ара берлектә; бергә. *Бергәләп эшләү.* ■ *Улдары әсәләре менән*

*бергәләп үҙҙәре генә донъя көтә башлаған* (Әкиәттән).

**БЕРГӘЛӘШЕП** *р.* Үҙ-ара бер булып; бергә-бергә. *Ете батыр бергәләшеп артабан киткән* (Әкиәттән).

**БЕРДА́НКА** [*рус.*] *и.* 1870—1891 йылдарҙа рус армияһы коралланыуында булған бер яһаклы мылтык.

**БЕРҘӘЙ** *р.* Бер тигеҙ, бер төрлө. *Сәлимов ыңғай һәм каршы һөйләүселәрҙе берҙәй ихлас тыңланы.* З. Биишева.

**БЕРҘӘМ** *с.* **1.** Бер бөтөн. *Укытыу менән тәрбиә эше берҙәм процесс итеп карала.*

**2.** Бер уй, ниәт менән береккән. *Берҙәм коллектив. Берҙәм эш. Берҙәм булыу.//Берҙәм тотоноу. Берҙәм куҙғалыу.* ■ *Кыпсак аралары үҙҙәрен ауылдың аҫаба башкорто һанай. Улар ишле лә, берҙәм дә халык.* Б. Бикбай. *Был йыйылыш башка йыйылыштарга караганда якшырак, берҙәмерәк үтте.* Б. Хәсән.

**БЕРҘӘН** *р.* **1.** Бер юлы, бер ыңғайҙан. *Новиков мәсьәләгә берҙән төшөндө.* Д. Юлтый.

**2.** *инш. мәғ.* Әйтер фекерҙәрҙе бер-бер артлы һанағанда кулланыла. *Куҙыйкүрпәстең, берҙән, йәтим булып, икенсенән, шулай уҙ һүҙле, шук булып үҫеүе Кусәр ханға окшамай ине, ти.* «Куҙыйкүрпәс менән Маянһылыу».

**БЕРҘӘН-БЕР** *с.* **1.** Бер генә бөртөк, яңғыҙ бер. *Берҙән-бер ат. Берҙән-бер бала. Берҙән-бер сара.* ■ *Кола кашка минең тир түгеп тапкан берҙән-бер байлығым.* С. Кулибай.

**2.** Вакытты асык итеп атамағанда кулланыла. *Берҙән-бер вакыт. Берҙән-бер көн.*

**БЕРЕГЕҮ** (берек*г*) *к.* **1.** Бергә тоташыу. *[Шәмсинур:] Әллә колхоздың кендеге бер Иш-булдыға береккәнме?* Ғ. Әмири.

**2.** Бергә тупланыу; берләшеү. *Көҙ, баш-куҙ алғас, береген ике ауыл, кооператив асып ебәрҙек.* Ғ. Амантай.

**3.** Бер нөктәгә, берҙәмлеккә килеү. *Фекер берегеү.* ■ *Дуҫ менән беҙ икәү бергә, .. Беректеләр серҙәр бергә.* Н. Нәжми.

◆ **Кәңәшегеҙ берекһен** һөйләшеп ултырған кешеләрҙе сәләмләү һүҙе.— *Кәңәшегеҙ берекһен, ағайҙар! Һаумыһығыҙ.* Ғ. Дәүләтшин.

**БЕРЕГЕШЕҮ** *к. урт. кар.* **берегеү** 2, 3.

**БЕРЕКМӘ** *и.* Бер төрҙәге эш тармактарынан торған эре ойошма; берләшмә. *„Башнефть" берекмәһе. «Мир» тегеүселек берекмәһе.* ■ *Экономикаға етәкселек итеү экономик һәм социаль үҫештең дәүләт пландары нигеҙендә, тармак һәм территориаль принциптарҙы иҫәпкә алып, үҙәкләштерелгән идара итеүҙе предприятиеларҙың, берекмәләрҙең һ. б. ойошмаларҙың хужалык итеүҙәге үҙ аллылығы һәм инициативаһы менән яраштырып алып барған хәлдә ғәмәлгә ашырыла.* Башкорт АССР-ының Конституцияһы, 1984.

**БЕРЕКТЕРЕҮ** *к.* **1.** Бергә тоташтырыу.

**2.**Бергә туплау; берләштереү. *Халыкты беректереү.*

**3.** Берҙәмлеккә килтереү (һүҙҙе, фекерҙе); беркетеү. *Һүҙ беректереү.*

**БЕРЕН-БЕРЕ, береһен-береһе** *билд. а.* Эш, хәрәкәттең кара-каршы мөнәсәбәтлеген белдерә. *Берен-бере һағалап тора. Береһен-береһе якын күрә.*

**БЕРЕНСЕ** *рәт һ.* **1.** Урын тәртибе 1 менән билдәләнгән. *Беренсе квартира. Беренсе класс.*

**2.** Бер нисәү эсенән тәүге. *Ямал йырҙың беренсе яртыһын иркен генә йырлаһа ла, икенсе яртыһында тауышы карлыкты ла куйҙы.* М. Тажи.

**3.** *с. мәғ. күсм.* Иң шәп, иң алдынғы. *[Етенбай:] Минең колхозда беренсе кеше булып йәшәгем килә.* М. Хәйҙәров. *[Фәрғәт:] Әсәй, ул бит ауылда беренсе урын! Күптәргә ул эләкмәне.* Р. Солтангәрәев.

**4.** *и. мәғ.* Бер-бер артлы ашала торған өс төрлө аштың тәүгеһе (ғәҙәттә, һурпалы аш). *Беренсеһенә һуған кыҙҙырып кыҙартылған кыҫыр һурпа, икенсеһенә помидор соусы менән койондоролған картуф котлеты .. ине.* С. Кудаш.

**БЕРЕНСЕЛ** *с.* Ниҙеңдер үҫешендә тәүге, беренсе баҫкыс булған, башланғыс булған.

**БЕРЕНСЕЛЕК** *и.* **1.** Берәй нәмәләге беренсе урын. *Кыпсак аралары, үҙҙәрен ауылдың аҫаба башкорттары һанай. .. Ләкин шакмандар ҙа уларға беренселекте бирергә теләмәй.* Б. Бикбай.

**2.** Ярыштағы алдынғы урын. *Команда беренселеге. Беренселекте алыу.* ■ *Башкортостан командаһы үтәсәк РСФСР беренселеге финалында катнашасак.* «Совет Башкортостаны», 1986, 29 май.

**БЕРЕНСЕНӘН** *инш. кар.* **берҙән** 2.

**БЕРЕ́Т** [*рус.* 〈 *фр.*] *и.* Тирәсһеҙ түңәрәк ләпәш баш кейеме. *Берет кейеү.*

**БЕРИ-БЕРИ** [*рус.* 〈 *синг.*] *и.* $B_1$ витамины етешмәгәнлектән килгән ауырыу; авитаминоз. *Бери-бери менән ауырығанда нервылар какшай, йөрәк йыш тибә, аппетит юғала.* В. Ғүмәров.

**БЕРИ́ЛЛИЙ** [*рус.* 〈 *гр.*] *и.* Химик элемент, бик каты һәм бик еңел көмөш төҫлө металл.

**БЕРКЕТЕЛЕҮ** *к. төш. кар.* **беркетеү.** *Эшкә беркетелеү.* ■ *Колхоздар биләгән ер уларға түләүһеҙ һәм срокһыҙ файҙаланыу өсөн беркетелә.* Башкорт АССР-ының Конституцияһы, 1984.

**БЕРКЕТЕҮ** *к.* **1.** Куша йәбештереү, тоташтырыу. *Ак мәрмәр өҫтөнә теге көршәктәрҙең береһен купмаҫлык итеп беркетеп ултырткандар.* З. Биишева.

**2.** Эшкә, урынға тәғәйенләү. *Агитатор итеп беркетеү. Пропагандист итеп беркетеү.*/Тәғәйенләп тапшырыу.— *Эш аттарын бөгөндән үк айырым кешеләргә беркетергә.* М. Тажи.

**3.** Кемдеңдер йәки ниҙеңдер исеменә, милкенә теркәү. *Был ерҙәрҙе ул үҙенеке итеп беркеткән.* Ә. Вахитов.

**4.** Бер нөктәгә, берҙәмлеккә килтереү, нығытыу (һүҙҙе, фекерҙе). *Үҙ-ара беркетеү.* ■ *[Ике ағай] кәңәш беркетә лә кустыларының утынын үртәп китергә була* (Әкиәттән).

◆ **Куңелде беркетеү** *кар.* **күңел.**

**БЕРКЕТЕШЕҮ** *к. урт. кар.* **беркетеү** 4. *Һүҙ беркетешеү.*

**БЕРКЕТКЕС** *и.* Айырым өлөш, киҫәктәрҙе бергә беркетә торған кулайлама.

**БЕРКЕҮ** *к. кар.* **берегеү.**

**БЕРКӘТӘҮ** *и. диал.* Бөрләтәү.

**БЕРЛЕ** *с.* **1.** Үлсәме бер берәмеккә тиң. *Берле калуш.*

**2.** *диал. кар.* **бер** 8.

**БЕРЛЕК**[1] *и.* **1.** Бер бөтөнлөк. *Диалектик берлек.*

**2.** Эш, тормоштағы уй, ниәт уртаҡлығына нигеҙләнгән тығыҙ мөнәсәбәт; берҙәмлек. *Күңел берлеге. Ҡараштар берлеге.* ■ *Көслө эш, ныклы көс — берлектә. Берлеккә! Йәшәһен элемтә!* Ғ. Амантай.

**БЕРЛЕК**[2] *и.* **1.** Ун иҫәбе эсендәге иң бәләкәй һәм беренсе һан.

**2.** Бер һумлыҡ аҡса.

**3.** *грам.* Һүҙ бер кеше йәки нәмә хаҡында барғанда ҡулланыла торған килеш һәм зат, заман, һан менән үҙгәреү формалары.

**БЕРЛЕКЛЕ** *с. диал.* Бер һүҙле. *Берлекле кеше.*

**БЕРЛЕКЛӘШЕҮ** *к.* Бергә ойошоу; берләшеү, берҙәмләшеү. *Берлекләшеп эшләү.*

**БЕРЛЕКСӘГӘ** *р. диал.* Бер юлға. *Берлексәгә гәфу итәм.*

**БЕРЛЕКТӘ** *р.* Бергәләп, бергә. *1812 йылда рус ғәскәрҙәре менән берлектә башҡорт һыбайлы полктары французларҙы Парижға тиклем эҙәрләне.* М. Хисмәтов.

**БЕРЛЕКТӘГЕ** *с.* Бергә башҡарылған. *Берлектәге коммюнике. Берлектәге ултырыш.*/Бергә эш иткән. *Берлектәге командование. Берлектәге комиссия.*

**БЕРЛӘМ: берләм юл** йәйәү кеше юлы; һуҡмаҡ. *Үҙән эсенә барып төшкәс, Ғәлимдәрҙең берләм юлы тағы тарая төштө, ҡушарлап барып булмай башланы.* З. Биишева.

**БЕРЛӘС** *и.* Игеҙ түгел, яңғыҙ. *Һарыҡтың бәрәсе берләс кенә булды.*

**БЕРЛӘШЕҮ** *к.* Бергә төркөмләшеү, бергә ойошоу. *Колхозға һикһән биш хужалыҡ берләште.* М. Тажи. *Ауылдан ҡалаға — икмәктәр, ҡаланан ауылға — күлдәктәр. Шулайтып, ҡала-ауыл берләшеп, көн итә күмәкләп, гөрләшеп!* Ғ. Амантай.

**БЕРЛӘШМӘ** *и.* **1.** Ойошҡан төркөм; ойошма. *Әҙәби берләшмә. Профсоюздар берләшмәһе.*

**2.** *хим.* Молекулаһы бер нисә элементтың атомдарынан торған матдә. *Азотлы берләшмәләр. Органик берләшмәләр. Химик берләшмә.*

**3.** *кар.* **берекмә.**

**БЕРЛӘШТЕРЕЛЕҮ** *к. төш. кар.* **берләштереү.**

**БЕРЛӘШТЕРЕҮ** *к.* **1.** Бергә төркөмләштереү; ойоштороу. *Владимир Ильич фекерҙәштәрҙе берләштерә торған революцион матбуғат органы төҙөү мәсьәләһен алға ҡуйҙы.* «Совет Башҡортостаны», 1964, 23 ғинуар.

**2.** *кар.* **тоташтырыу.**

**БЕРМЕКЛӘҮ** *к. диал.* Берәмекләү.

**БЕРМӘ** *р.* Бер юлы, бер ыңғай. *Алтындуға батыр шул ваҡытта барып [дейеүҙең] алты башын бермә ҡыра һуҡты, ти* (Әкиәттән).

**БЕРМӘ-БЕР** *р.* **1.** Ике тапҡырға; икеләтә. *Март урталарында ғына бригаданы ҡабул итеп алған Вәлиевка эш ауырлығы башҡаларға ҡарағанда бермә-бер күберәк төштө.* «Совет Башҡортостаны», 1966, 9 октябрь.

**2.** Шул ыңғай, ҡапыл. *Дарыу бермә-бер килеште.*/Барған һайын, әлдән эле, тиҙ. *Хан ҡыҙының ҡурайсыға мөхәббәте бермә-бер артҡан.* Й. Солтанов. *Киске һигеҙгә табан тағы һыуыҡ көсәйҙе. Шыйыҡ күкһел томан бермә-бер ҡуйырҙы.* «Совет Башҡортостаны», 1969, 31 ғинуар.

**БЕРС** *ҡыу.* Бесәйҙе ҡыуа торған һүҙ. *[Сафиулла:] Берс, кәһәр һуҡҡыры нәмә! Бар келәткә, сысҡан тот!* С. Агиш.

**БЕРСӘ**[1] *р.* Бер ыңғай, бер юлы. *Ереҥ буйлап ғәмһеҙ атлай инем, күктәреңә ҡарап аҙаштым, ике күҙем берсә ҡамашты.* М. Кәрим. *Һуйыр уйнай. Берәһе бөтөүгә икенсеһе йыр башлай йә ике-өсө берсә йырлай.* «Совет Башҡортостаны», 1967, 11 апрель.

**БЕРСӘ**[2], **берсә..., берсә...** *бүл. терк.* Бер-бер артлы һанап әйткәндә ҡулланыла. *Һыуһылыу .. Заятүләген көтә лә көтә, берсә һағынып, берсә шомланып, йырҙар йырлай.* «Заятүләк менән Һыуһылыу.

**БЕРСӘК-ҺӘРСӘК** *с.* Киҫәк-миҫәк ҡырҡылған, өҙөлгән-йолҡолған. *Берсәк-һәрсәк йорон.* // *Асыуланды Күсәк батыр,.. барын да балаларҙың ҡыйрата, ти, тотоп алып, өҙгөләп берсәк-һәрсәк.* «Бабсаҡ менән Күсәк».

**БЕРТОЛЕТ** [*рус.* бертолетов ⟨ *фр.*]: **бертолет тоҙо** органик матдәләр менән берлектә шартлағыс ҡатышма барлыҡҡа килтерә торған аҡ төҫтәге кристаллик порошок.

**БЕРҮК** *инш.* Һиҙер үтенгәндә ҡулланыла; зинһар. *[Тәнзилә әбей:] Балаҡайым, берүк ураҡҡа тотонма, йә яҙатайым бармағыңды ҡырҡып ебәрерһең.* М. Тажи.

**БЕРҺЕГӨН(ГӘ)** *р.* Иртәнән һуңғы көндө. *— Һау булһынһа, иртәгәгә атты ял иттереп, берһегөнгә Ҡолбаҡтыға утын төшөрөргә кәрәк.* Т. Хәйбуллин.

**БЕРӘГӘЙ** *с.* Бер үҙе күпкә торошло; бер тигән.//*Бер әйтә — берәгәй әйтә.* ■ *Атанан алтау тыуғанса, береү ҙә берәгәй тыуһа ине, ил ағаһы булһа ине, ил башында торһа ине* (Ҡобайырҙан).

**БЕРӘГӘЙЛЕ** *с. кар.* **берәгәй.**

**БЕРӘҘӘК** [*рус.* бродяга] *и. диал.* **Ҡыҙырас.**

**БЕРӘЙ** *с.* Ниндәйҙер бер, билдәһеҙ бер. *Берәй ваҡыт. Берәй файҙа.* ■ *— Бабай, бынау саңғыларҙы алып китеп, берәй ергә йәшереп ҡуй әле. Күңелемә ауыр булып, күҙ алдымда тормаһын.* М. Тажи. *Зәйнәп, һүҙҙән туҡтап, миңә ҡарай, берәй шиге булған кешеләй.* Ғ. Сәләм.

**БЕРӘЙҺЕ** *и.* Берәй кеше, бер-берәү.— *Бөгөн ул хикәйәтте мин һиңә һөйләйем. Бәлки бер саҡ һин дә берәйһенә һөйләрһең.* З. Биишева.

**БЕРӘМ-БЕРӘМ** *р.* Һәр береһен үҙенә башҡа; айырым-айырым. *Һунарсы .. асыуынан теге түмәрҙәрҙе күтәреп, берәм-берәм ситкә ташлай башланы* (Әкиәттән).

**БЕРӘМЕК** *и.* **1.** Үлсәм итеп билдәләнгән күләм, дәүмәл. *Аҡса берәмеге. Ауырлыҡ берәмеге. Күләм берәмеге. Мал аҙығы берәмеге.*

**2.** Бер бөтөн нәмәнең үҙ аллы бер өлөшө. *Хужалыҡ берәмеге. Ғәскәри берәмек.*

**3.** *с. мәғ.* Айырым-айырым, берәм-берәм; яңғыҙ. *Мәжит Ғафури кеүек бер нисә берәмек яҙыусылар үҙҙәренең әҫәрҙәрен башҡорт теленә*

*якын булган татар телендә яҙҙы.* Ә. Харисов.

**БЕРӘМЕКЛӘҮ** *к.* Берәм-берәм айырыу. *Берәмеклән карау.* ■ *Ул әбей ҙә берәмекләп үҙ хәлдәрен һөйләне, ти* (Әкиәттән).

**БЕРӘМЛӘП** *р.* Берәм-берәм итеп йәки булып. *Берәмләп өләшеү.* ■ *Килене берәмләп йыуаса һын ырғыта бара, Мәскәй әбей йота бара, ти* (Әкиәттән).

**БЕРӘМТЕКЛӘҮ** *к. кар.* **берәмекләү.**

**БЕРӘМ-ҺӘРӘМ** *с.* Унда-һанда берәү; һирәк--мирәк, айырым-айырым. *Ай ҙа калкты. Һыу өҫтөндә берәм-һәрәм маяктар емелдәшә башланы.* И. Низамов. / / *Хисмәтулла киткәс, йыйылыш оҙакка барманы. Активистар берәм-һәрәм өйҙәренә таралды.* Я. Хамматов.

**БЕРӘР** *бул. һ.* **1.** Һәр бере берҙән торған, бергә тиң. *Берәр алма.*

**2.** *кар.* **берәй.**

**БЕРӘРЛӘП** *р.* Берәр итеп. *Алманы кеше башына берәрләп өләшеү.*

**БЕРӘҮ 1.** *йыйн. һ.* Бер кеше йәки нәмә. *Һәйбәт йырсылар аҙ түгел, тик берәүҙе әҙләй күңел.* Ғ. Рамазанов.

**2.** *билдһ. а.* Билдәһеҙ кеше, бер кеше. *Эстән берәү сығып, нәҙек тауыш менән: «Кем бар?» — тип кыскырҙы.* Т. Йәнәби. *Һыр йылғаһы буйында берәү йырлай, эскәйҙәре тулы һагышка* (Халык йырынан).

◆ **Берәү ҙә** һис кем, һис бер кем. *Халык кинонан кайта. Берәү ҙә кабаланмай.* С. Агиш.

● *Берәү «бер» тигәнсә, күмәк көлдәк өлгөртөр.* Әйтем. *Берәү мал таба, берәү янсык тегә.* Әйтем.

**БЕС-БЕС** *сакр.* Бесәйҙе саҡыра торған һүҙ. *Тау башынан төшөп, якынлашып: „Бесәйкәй, бес-бес!" — тинем, кул болгап.* Ш. Бабич.

**БЕСЕ́ДКА** [*рус.*] *и.* Ял итеп ултыра торған өҫтө ҡыйыҡлы урын. *Бакса уртаһында беседка. Ул артык ҙур түгел, эсендә түңәрәк өҫтәл. Беседка тирәһендә үрмәле гөлдәр үҫтерелгән.* Ғ. Хәйри.

**БЕСЕК** *с. диал. кар.* **үсексән.** *Бесек кеше.*

**БЕСЕЛДӘҮ** *к. кар.* **бысылдау.**

**БЕСЕЛЕҮ** [1] *к. төш. кар.* **бесеү** [1]. *Кәңәш менән беселгән тунда кәмселек булмаҫ.* Әйтем.

**БЕСЕЛЕҮ** [2] *к. төш. кар.* **бесеү** [2]. *Беселгән һарык тәкәһе.*

**БЕСЕМ** *и. диал.* Бышым.

**БЕСЕҮ** [1] *к.* Кейем тегеү өсөн тауарҙы үлсәп ҡырҡыу. *Бесә белеүсе юк. Шулай ҙа кыҙҙар .. кулдәктең бөтә катмарын хәтерҙәренә төшөрә--төшөрә икәүләп бесте.* Һ. Дәүләтшина.

◆ **Хаҡ бесеү** һатыулашып, хаҡ килешеү. *Баҙарҙың һәр урынында халык мыжғып тора. Алыусылары ла, һатыусылары ла шау килеп һөйләшә, кул һуғыша. Хак бесәләр, сауҙалашалар.* Ғ. Дәүләтшин.

● *Атанан күргән ук юныр, инәнән күргән тун бесер.* Әйтем. *Буйыңа карап туның бес.* Әйтем.

**БЕСЕҮ** [2] *к.* Аталыҡ биҙҙәрен ҡырҡып алыу; һылыулау. *Бескән үгеҙ. Мал бесеү.*

**БЕСЕШЕҮ** *к. урт. кар.* **бесеү** [1]. *Кейем бесешеү.*

**БЕСКӘКЛӘҮ** *к. диал.* Сәнскәкләү.

**БЕСЛӘК** *с. диал. кар.* **бысый 1.**

**БЕСЛӘКЛӘНЕҮ** *к. диал. кар.* **бысыйланыу 1.**

**БЕСНӘК** *и. диал.* Ҡарабаш турғай.

**БЕСТЕРЕЛЕҮ** [1] *к. төш. кар.* **бестереү** [1]. *Яңыса бестерелгән кулдәк.*

**БЕСТЕРЕЛЕҮ** [2] *к. төш. кар.* **бестереү** [2]. *Бестерелгән үгеҙ.*

**БЕСТЕРЕҮ** [1] *к. йөкм. кар.* **бесеү** [1]. *Кулдәк бестереү.*

**БЕСТЕРЕҮ** [2] *к.* **1.** Аталыҡ биҙҙәрен ҡырҡып алыу; бесеү, һылыулау, көйҙөрөү.

**2.** *һөйл.* Сөннәткә ултыртыу.

**БЕСТЕРТЕҮ** [1] *к. йөкм. кар.* **бестереү** [1]. *Кулдәк бестертеү.*

**БЕСТЕРТЕҮ** [2] *к. йөкм. кар.* **бестереү** [2]. *Тәкәне бестертеү.*

**БЕСТЕРӘҮ** *и. диал.* Артмаҡ.

**БЕСТЕРӘҮЛӘҮ** *к. диал. кар.* **артмаҡлау 1.**

**БЕСТӘТӘҮ** *с. һөйл.* Ыштанһыҙ (ир балаға ҡарата). *Бестәтәү йөрөгән малай.*

**БЕСӘЙ** *и.* **1.** Сыҫкан тота торған йыртҡыс ҡылыҡлы йорт йәнлеге. *Ата бесәй. Инә бесәй.* ■ *Иркә ала бесәй ҙә бер үҙе генә иҙәндә, күҙҙәрен уттай яндырып, .. мырр .. итеп Һылыу әбейҙең елкәһенә яркаһын терәп, рәхәтләнеп йокларға ятты.* Т. Йәнәби. *Бесәй мөйөштә бер сыскан йөрөгәнен һиҙеп алган. Шым ғына барып, уны тотоп алган* (Әкиәттән). **Бохар бесәйе** ялбыр йомшаҡ йөнлө бесәй./*күсм.* Өнө, тыны сыҡмаған йыуаш кешегә ҡарата әйтелә. *Аяк тибеп, бер екерһәм, бесәй була иргенәм. Мактана тип уйламагыҙ, ул бит минең бергенәм.* Ҡ. Даян.

**2. бесәйҙәр, бесәй һымаҡтар** *зоол.* Йорт бесәйе, арыҫлан, юлбарыҫ һ. б. шундай имеҙеүсе йыртҡыс йәнлектәр ғаиләһе.

◆ **Бесәй борсағы** *кар.* **борсаҡ** [1] 3. *Бөҙрә бесәй борсагы. Урман бесәй борсагы.* **Бесәй күҙе** *диал.* күгәрсен күҙе (*кар.* **күгәрсен**). **Бесәй күмәсе** *диал. кар.* **бесәй табаны. Бесәй ҡойроғо** *кар.* **бесәйҡойроҡ. Бесәй ҡуҙғалағы** *кар.* **ҡуҙғалаҡ. Бесәй табаны** түңәрәк япраҡлы, һиҙәп орлоҡло үлән (тапанды ерҙә үҫә). **Бесәй тарыһы** *кар.* **тары. Бесәй төкөрөгө** *кар.* **төкөрөк. Утка** (*йәки* **ҡуҙға) баҫҡан бесәй кеүек** сыҙамай, өтәләнеп йөрөгән кешегә ҡарата әйтелә. *Сынбулатов көнө килеп терәлгәс кенә, утка баҫкан бесәй кеүек, бер һелтәүҙә донъя кыйратырҙай булып һикергеләнә, екергеләнә.* М. Тажи. **Эт менән бесәй кеүек** үҙ-ара талашып, ыҙғышып торған кешеләргә ҡарата әйтелә. *[Хужабикә:] һәр вакыт эт менән бесәй кеүек ырылдашып-мырылдашып кына тораһығыҙ.* С. Агиш.

● *Бесәй юк ерҙә сыскан түрә була.* Мәҡәл.

**БЕСӘЙБАШ** *и. диал.* Һупай.

**БЕСӘЙГҮҘ** *и. диал.* Өкө.

**БЕСӘЙҒОЙРОҠ** *и.* Башағы бесәй ҡойроғона оҡшаған, ваҡ ҡына йылтыр ҡара орлоҡло ҡыяҡлы үлән.

**БЕСӘЙ-СЫСҠАН** *и.* Балалар уйыны (тото-шоп, түңәрәкләнеп торалар; аранан икәү «бесәй» менән «сыҫҡан» булып баҫтырыша; түңәрәктәгеләр «сыҫҡан» үткән ергә «бесәйҙе» үткәрмәҫкә тырыша; «бесәй» «сыҫҡанды» тотҡан тәңгәлдә түңәрәктән икәү сығып, тағы баҫтырыша).

**БЕСӘН** *и.* Малға ашатыу өсөн сабылған үлән. *Йәш бесән. Япраҡ бесән. Бесән ваҡыты. Бесән сабыу. Бесән йыйыу.* ■ *Бер яктан бесән сабыла, икенсе яктан йыйыла, өсөнсө яктан күбәләнә, дүртенсе яктан кәбәндәр ҡойола. Эш ҡайнай.* Ғ. Дәүләтшин. **Аҙау бесән** былтырҙан ҡалған бесән.

♦ **Дуға менән бесән сабыу** килешмәгән, мәғәнәһеҙ эш эшләү.

**БЕСӘНЛЕК** *и.* **1.** Йорт янындағы бесән ҡуйылған урын. *Әмир хуш еҫле ҡайын миндеге менән мунса керҙе лә тирләп, бешеп сәй эсеп, аҙбар башына бесәнлеккә менеп китте.* Х. Ғиләжев.

**2.** *диал. ҡар.* **утлыкса**[1].

**3.** *диал.* Сабынлыҡ.

**БЕСӘНСЕ** *и.* Бесән эшендәге кеше. *Бесән йыйыу ағым методы менән башҡарыла. Бесәнселәргә туләүһеҙ аш ойошторолған.* «Совет Башҡортостаны», 1968, 25 июнь.

**БЕТ** *и.* **1.** Кеше, ҡош, йәнлек тәнендә ҡан һурып йәшәгән бәләкәй генә ҡанатһыҙ бөжәк. *Баш бете. Кейем бете. Ҡаҙ бете. Һарыҡ бете.*

**2.** Үҫемлектең һутын һурып ҡорота торған йәшел төҫтәге ваҡ ҡына ҡанатһыҙ бөжәк; кеблә.

**БЁТА** [*рус.* ⟨ *гр.*] *и.* Грек алфавитының беренсе хәрефе исеме.

**БЁТА-НУРҘАР** [*рус.* ⟨*гр.* + *гәр.*] *и. физ.* Тарҡалған ваҡытта атом ядролары сығарған электрон йәки позитрон ағымы.

**БЕТЕЙ** *и. диал.* Эмей.

**БЕТЕҮ** *и.* **1.** *иҫк.* Яҙыу, документ. *Хан яғынан тархандыҡ бетеүе алған кеше генә ҡотола ала.* К. Мәргән.

**2.** Дини кешеләрҙең доға яҙып, күн менән өсмөлләп көпләп, ауырыу, зәхмәттән муйынға йәки кейемгә тағып йөрөй торған нәмәһе. *Мулла менән мәзин бетеү яҙыуҙан бушаманы. Ул бетеүҙәрҙе ҡатындар, әбейҙәр .. [Һүгышка] киткән кешеләрҙең муйынына, түшенә таҡты.* Ж. Кейекбаев. *[Курәҙә] өс мөйөшлө бетеүҙе ауырыуҙың ҡултығы аҫтына тағырға ҡушты.* Я. Хамматов.

**2.** *диал. ҡар.* **бетеүсә** 1, 2.

**БЕТЕҮЛӘҮ** *к.* Өскөлләп ҡорама ҡорау.

**БЕТЕҮСӘ** *и.* **1.** Ваҡ ҡына өсмөйөш рәүешендәге биҙәк.

**2.** Өсмөйөшлө ҡорама.

**3.** *диал.* Ҡош теле (*ҡар.* **ҡош**).

**БЕТЛЕ** *с.* Бетләгән, бет баҫҡан. *Бетле баш.*

**БЕТЛЕКӘЙ**[1] *и. диал.* Әтмәкәй.

**БЕТЛЕКӘЙ**[2] *и. диал.* Көтөүсе муҡсаһы (*ҡар.* **көтөүсе**).

**БЕТЛӘҮ** *к.* **1.** Бетлегә әйләнеү, бетле булыу. *[Шәмғи:] Ҡәҙерғол, герман һуғышында ла гел бетләп йөрөнөк, ти бит. Мин һеҙҙең менән булһам, керегеҙҙе йыуыр инем.* А. Таһиров.

**2.** *кусм.* Уйындан ялҡып йә үсегеп сығып китеү; ҡортлау.

**БЕТО́Н** [*рус.* ⟨ *фр.*] *и.* Цементҡа ҡом, ҡырсын ҡушып яһаған төҙөү материалы. *Бетон иҙеү. Бетон һалыу. // Бетон стена.* **Бетон иҙгес** бетон иҙеү машинаһы.

**БЕТОНЛАНЫУ** *к. төш. ҡар.* **бетонлау.** *Юл бетонланды.*

**БЕТОНЛАУ** *к.* Бетон һалып эшләү. *Өй нигеҙен бетонлау.*

**БЕТОНСЫ** *и.* Бетон эшендәге эшсе. *Май байрамы хөрмәтенә бетонсылар йәнә 250 кубометр бетон һалырға булды.* «Совет Башҡортостаны», 1964, 30 апрель.

**БЕТСӘ** *и.* **1.** Ҡысынма ҡорто.

**2.** *кусм.* Түбән, меҫкен кеше. *[Фәрит:] Ҡуркма! Һинең кеүек бетсәгә һуғып бысрана торған ҡул түгел.* Ғ. Әхмәтшин.

**3.** *диал.* Ҡысынма. *Тәнгә бетсә сыҡҡан.*

**БЕТСӘЛӘҮ** *к. диал.* Ҡысынмалау. *Тән бетсәләгән.*

**БЕТӘҮ**[1] *с. диал. ҡар.* **бөтәү** 1.

**БЕТӘҮ**[2] *и. диал. ҡар.* **аран** 1.

**БЕШБЕЛДЕК** *с. диал. ҡар.* **бысый** 2.

**БЕШЕ** *с.* **1.** Тығыҙ, ныҡ. *Беше ағас. Беше тауар. Беше булыу. Беше итеү.* ■ *— Мин сәптәне бешерәк итеп һуғырға тырышам* Н. Мусин.

**2.** *кусм.* Эшкә ныҡ, бирешмәй торған; түҙемле. *Рөстәм ишә. Беше малай ул, спортсмен.* Б. Бикбай.

**3.** *кусм.* Әйткәнгә ыжламаҫ; ышаһыҙ, кеҙе.

♦ **Беше баш** аҡыллы кешегә ҡарата әйтелә.

**БЕШЕГЕҮ**[1] (бешек*ә*) *к.* Эҫеләп тирләү. *Ныҡ урап, бала бешегеп киткән.*

**БЕШЕГЕҮ**[2] (бешек*ә*) *к.* **1.** Бешегә (1 мәғ.) әйләнеү. *Ҡарағас ер аҫтында суй булып, бешегеп китә.*

**2.** *кусм.* Көскә ныҡыу; сыныҡыу. *Сәфәрҙең бешеккән тәне юк-барға сырхап бармай.* «Ағиҙел», 1969, № 2.

**3.** *кусм.* Ыжламаҫ, кеҙе кешегә әйләнеү.

**БЕШЕКЛӘНЕҮ** *к. төш. ҡар.* **бешекләү.**

**БЕШЕКЛӘҮ** *к.* **1.** Сей нәмәне әҙ генә ҡайнатып алыу. *Эсәк-ҡарынды бешекләү.* / Ҡайнар һыуҙа йомшартыу, парға бешереү. *Мал аҙығын бешекләү.* ■ *Колхозда малға һалам күп ашатыла. Уны турағас, бешекләйҙәр, бесән онтағы өҫтәйҙәр.* «Совет Башҡортостаны, 1965, 6 ғинуар.

**2.** Ҡайнар һыу менән сайҡау, ҡайнар һыу менән эшкәртеү. *Марат кухняла кастрюлен ҡайнар һыу менән бешекләп йыуып тора.* Ф. Иҫәнғолов.

**БЕШЕКЛӘҮЕС** *и.* Мал аҙығын бешекләй, парлай торған ҡорамал.

**БЕШЕКСЕ** *и. диал.* Ашнаҡсы. *Бешексе Сәлимә .. һауыт менән аш индереп ултыртты.* Һ. Дәүләтшина.

**БЕШЕКТЕРЕҮ** *к.* Беше (1 мәғ), тығыҙ хәлгә килтереү; беше итеү. *Бешектереп алыу.*

**БЕШЕЛЕҮ** *к. төш. ҡар.* **бешеү**[2].

**БЕШЕЛӘНЕҮ** *к.* Беше, тығыҙ хәлгә килеү; бешегеү. *Йүкә бүртеп, бешеләнеп киткән.* Б. Бикбай. *Һуғылған киндерҙе һелтелә ҡайнатһаң, бешеләнә, тығыҙлана.*

**БЕШЕНЕҮ** *к. диал. ҡар.* **бешегеү**[1]. *Аяк бешенә. Бармаҡ араһы бешенә.*

**БЕШЕРЕЛЕҮ** *к. төш. ҡар.* **бешереү** 1, 2. *Тары онланды, май бешелде, бауырһаҡ бешерелде.* Ф. Рәхимғолова.

**БЕШЕРЕМ** *и.* Бешереүгә етерлек миҡдар. *Бер бешерем картуф. Ике бешерем ит.* ■ *[Ямал:] Ҡана, Зыя ҡәйнеш, беҙгә лә берәр бешеремлек өлөш ҡалдыр әле.* М. Тажи.

♦ **Ауыҙы бер** (*йәки* **биш**) **бишерем** *ҡар.* **ауыҙ.**

**БЕШЕРЕНЕҮ** *ҡ.* Аш-һыу менән мәшғүл булыу. *Килде Фәхри. Еңгәһе .. нимәлер бешеренеп йөрөй ине.* Б. Бикбай.

**БЕШЕРЕНЕҮ-ТӨШӨРӨНӨҮ** *ҡ.* Аш-һыу әҙерләү. *Бешеренеү-төшөрөнөүгә оҫта кеше.*

**БЕШЕРЕҮ** *ҡ.* **1.** Ҡайнатып йәки юғары эҫелектә тотоп, ашамлыҡ-эсемлек әҙерләү. *Ашарға бешереү. Аш бешереү. Икмәк бешереү.* ■ *Сәлмән ҡайтып ингәс, әсәһе ҡаҙан тултырып картуф бешереп ебәргән, ти. Уны дүртәүләп ултырып, бик яратып ашанылар, ти* (Әкиәттән). / Ҡайнап сыҡҡанса утта тотоу; ҡайнатыу. *Һөт бешереү.*

**2.** Ҡайнатып йәки ҡайнар һыуға һалып, тәмен, шифаһын сығарыу. *Андыҙ бешереү. Мәтрүшкә бешереү. Сәй бешереү.* / Ҡайнатып, эҫелә тотоп, йомшартыу. *Туғын бешереү.* ■ *[Хөсәйен:] Бешермәһәң, тал һына бит ул. Ә бешерһәң, ҡамыр кеүек була.* Р. Ғабдрахманов.

**3.** Утҡа, ҡайнар нәмәгә зарарлау (тәнде); яндырыу. *Эҫе сәйгә ауыҙҙы бешереү.* ■ *Көмөш кенә ҡашыҡ, һабы нәҙек, тотмаһана — ҡулың бешерер* (Халыҡ йырынан). / Бик ныҡ эҫетеү; ҡыҙҙырыу (көнгә ҡарата).

**4.** *күсм.* Пыр туҙҙырып әрләү; ҡыҙҙырыу. *[Председателгә — урынбаҫар:] Бәлә булды был Хөрмәтуллин. Әллә эшләй бирһенме? Үҙен саҡыртып, бешерергә лә шуның менән фатихаларға кәрәк.* З. Хисмәтуллин. / Ҡыҙып туҡмау, дөмбәҫләү. *Икенсе ҡазаҡ ҡамсы менән крәҫтиәнде бешерә башланы.* Д. Юлтый. *Дивизияның бер нисә батареяһы беҙҙең участкала. Фашистарҙы бешерәләр генә.* С. Әлибаев.

♦ **Ауыҙҙы бешереү** *ҡар.* **ауыҙ. Борсаҡ бешереү** *ҡар.* **борсаҡ** [1]. **Эш бешереү** *ҡар.* **эш.**

**БЕШЕРЕҮСЕ** *и.* Ниҙер бешереү эшендәге кеше. *Аш бешереүсе. Икмәк бешереүсе.*

**БЕШЕРЕШЕҮ** *ҡ. урт. ярҙамл. ҡар.* **бешереү** 1, 2.

**БЕШЕРТЕҮ** *ҡ. йөкм. ҡар.* **бешереү** 1, 2.

**БЕШЕҮ** [1] *ҡ.* **1.** Ҡайнап йәки юғары эҫелектә тороп, ашау-эсеү өсөн әҙер булыу. *Аш бешкән. Икмәк бешкән.* ■ *Күсәр хан .. ут яҡҡан ергә барып ҡараһа, ҡаҙан тулы ҡош ите бешеп ултыра, ти.* «Ҡуҙыйкүрпәс менән Маянһылыу». / Ҡайнап сығыу. *Бешкән һөт.*

**2.** Ҡайнап йәки ҡайнар һыуҙа ебеп, тәме, шифаһы сығыу. *Сәй бешкән.* / Ҡайнар һыуҙа йәки эҫелә йомшарыу. *[Ғәйни ағай:] Минең дә бөгөн бер нисә тәртә бөгөүҙән башҡа бер эшем дә юҡ, тәртәлектәр ҡояшҡа бешә торһон, тием.* Т. Йәнәби.

**3.** Утҡа, ҡайнар нәмәгә тейеп, зарарланыу (тәнгә ҡарата). *[Ҡыҙҙар] бирешмәҫкә тырыша. Әъәм, ҡалай эҫе,— ти ҙә, бешкән аяҡтарын һыуыҡ балсыҡҡа тыға.* Һ. Дәүләтшина. / *күсм.* Эҫеләп, тиргә батыу. *Кәли янды, беште. Манма һыуға төшөп тирләне.* И. Насыри.

**4.** Үҫеп, ашарлыҡ, файҙаланырлыҡ хәлгә етешеү; өлгөрөү. *Ашлыҡ бешкән. Көнбағыш бешкән. Емеш-еләк бешкән. Бешкән алма.* ■ *Үлән бешкәс, кемдер инде алдырып бесән сапҡан.* Ғ. Дәүләтов. / *күсм.* Буйға үҫеп етеү; өлгөреү. *[Егет — батшаға:] Кесе ҡыҙыңдың алма кеүек бешкән сағы, шуға күрә үҙе кеүек бешкән ҡыҙыл алма бирҙем* (Әкиәттән).

♦ **Бешкән дә төшкән** бер нәмәне анһат ҡына күреп, һораған йәки һорашҡан кешегә әйтелә. **Бит бешеү** *ҡар.* **бит** [1]. **Борсаҡ бешеү** *ҡар.* **борсаҡ** [1]. **Эш бешеү** *ҡар.* **эш.**

**БЕШЕҮ** [2] *ҡ.* **1.** Көбөгә һалып, аҫҡа-өҫкә табан болғатыу (ҡымыҙ, май яһау өсөн). *Май бешеү. Ҡымыҙ бешеү.* ■ *[Әсә:] Кисә һауҙым мин бейә һәм дә ҙур дөйә; шул һөттәрҙе бешәйек, ҡымыҙ итеп эсәйек.* Й. Солтанов.

**2.** *күсм.* Ныҡ әрләү; бешереү.— *Ҡыланды инде [бабай] заманында, хәҙер ҙә тынғы бирмәй. Бигерәк тә комбайнерҙарҙы бешә: урылған ерҙә бер генә башаҡ күреп ҡалһа ла, тегеләрҙең йәнен ала.* И. Ғиззәтуллин. / Ныҡ туҡмау. *[Ғәйзулла:] Ниңә илайһың? Әллә малайҙар бештеме?* Я. Хамматов.

**БЕШЕҮ** [3] *ҡ. диал.* **1.** *ҡар.* **тунау** 1.

**2.** Сәнсеү.

**БЕШКӘК** [1] *и.* Көбөлә ҡымыҙ, май бешә торған оҙон һаплы, гөмбөр башлы ағас ҡорал.

♦ **Сепарат бешкәге** *диал.* сепарат күпсеге.

**БЕШКӘК** [2] *и. диал.* Бешмә.

**БЕШМӘ** *и.* Айыры тояҡлы малдың ауыҙы, тояҡ аралары иҙелеп ауырый торған йоғошло ауырыу.

**БЕШМӘГӘН** *с.* **1.** Бешеп өлгөрмәгән. *Бешмәгән ит. Бешмәгән икмәк.*

**2.** *күсм.* Ҡулынан эш килмәгән; булдыҡһыҙ, ебегән.— *Әй бешмәгән, Зөләйхәңде оҙатып ҡуялар уны. Ниндәй һин егет!* Т. Йәнәби.

**БЕШӘ** [*фарс.*] *и.* Йәш ҡарағай. *Шәм һымаҡ төҙ, һомғол ҡарағайҙар тик ҡояшҡа ҡарап үрләгән. .. Улар күкрәктәрен киреп баҫҡан, бешәләрен һаҡлап елдәрҙән.* В. Ишмурзин.

**БЕШӘЛЕК** *и.* **1.** Бешә үҫкән урын, ваҡ ҡарағайлыҡ. *Тау баштарындағы өйөм-өйөм булып тегендә-бында үҫкән ҡарағай, шыршы ағастары, бешәлектәр генә алыҫтан йәшәреп күренә.* Ж. Кейекбаев.

**2.** *диал.* Бик ҡуйы урман.

**БЕШӘЛКӘҺЕҘ** *с.* Ҡулынан йүнле эш килмәгән; бешмәгән, ебегән. *Бешәлкәһеҙ кеше. Бешәлкәһеҙ булыу.* / Тотоуға ипһеҙ, ҡулайһыҙ (ҡулға ҡарата). *[Мөхәммәтулла:] Анау көндө .. ишек алдындағы ташҡа ныгырак йығылдым, ахыры. Шунан беләк һыҙлаулы, ҡул бешәлкәһеҙ булып алды.* Ә. Вахитов.

**БЕШӘЛӘНЕҮ** *ҡ.* Эҫегә яныу, эҫеләү. *Салиха аласыҡта төтөнгә бешәләнеп, аш-һыу әҙерләп йөрөй ине.* Ж. Кейекбаев.

**БЕШӘЛӘҮ** *ҡ. диал. ҡар.* **бешекләү** 1.

**БЕШӘРЕҮ** *ҡ. диал. ҡар.* **йәшәреү** [1] 1. *Йәшендән һуң ағастар бешәреп китә.*

**БИБЕК** *и. диал.* Тәгәрләк. *Аҡ ыласын менән күк ыласын ҡыуалатып тота бибекте* (Халыҡ йырынан).

**БИБЕШ** *и. диал. ҡар.* **себеш** [1] 1.

**БИБЛИО́ГРАФ** [*рус.*] *и.* Библиография буйынса белгес.

**БИБЛИОГРАФИК** *с.* Библиографияға мөнәсәбәтле. *Библиографик белешмә. Журналдың библиографик бүлеге.*

**БИБЛИОГРА́ФИЯ** [*рус.* ⟨*гр.*] *и.* **1.** Китап һәм башҡа баҫма нәмәләр тураһындағы систематик белешмә.

**2.** Айырым бер мәсьәләгә ҡараған хеҙмәттәр исемлеге.

**БИ́БЛИЯ** [*рус.* ⟨*гр.*] *и.* Йәһүд һәм христиандарҙың дини китабы.

**БИВА́К** [*рус.* ⟨*фр.*] *и.* Ғәскәрҙең йәки походта, экспедицияла, сәйәхәттә һ. б. ҡатнашыусыларҙың халыҡ йәшәгән ерҙән тыш ҡуныу йәки ял өсөн туҡтаған урыны.

**БИГЕРӘК, бигерәк тә** *р.* **1.** Саманан тыш, кәрәктән артыҡ, артыҡ дәрәжәлә. *Бигерәк ауыр. Бигерәк күп.* ■ *Һәтес-һәтес-һәтес тә бигерәк матур бәпес тә.* Ғ. Амантай.

**2.** Беренсе нәүбәттә, иң элек. *Мин халыҡтың, бигерәк тә Хасбулат олатай кеүек ҡарттарҙың, һәр батырҙы үҙ токомо, һис юғында якташы итеп иҫәпләй торған гәҙәтен якшы беләм.* З. Биишева.

**3.** Бер хәл, күренеште йәки нәмәне икенсеһенә сағыштырып күрһәткәндә ҡулланыла.

**БИГУДИ́** [*рус.* ⟨*фр.*] *и.* Бөҙрәләү өсөн сәсте урай торған ҡыҫҡа торба рәүешендәге нәмә. *Сәсте бигудиға урау.*

**БИГҮК** *р.* Ул ҡәҙәр, ул тиклем. *Ни тиклем оҫта булмаһын, Хөсәйен бигук мандып донъя көтә алмай.* Ф. Иҫәнғолов.

**БИҒЫЛЫЙ** [*рус.* беглый] *с. диал.* Ҡасҡы.

**БИҒӘЙБӘ** [*фарс.*] *с.* **1.** Ғәйеп итмәҫлек, ғәйепһеҙ. *Бигәйбә кыланыш.*

**2.** Ғәйеп итмәгеҙ, ғәйепләштән булмаһын, тигән мәғәнәлә әйтелә. *[Бәҙретдин:] Ярай, бигәйбә, әллә ниҙәр һөйләп ташланым.* Ғ. Байбурин.

**БИҒӘЙНИ** [*фарс.* ⟨*ғәр.*] *р. иҫк. кит.* Нәҡ шулай.— *Үҙем хосуси хәлемдә бер ҙә тәбәддел юк. Бигәйни, үҙең күргәндәге рәүештә торам.* М. Ғафури.

**БИҒӘЙӘТ** [*фарс.* ⟨*ғәр.*] *р. иҫк. кит.* Сиктән тыш, сикһеҙ, бик. *Хандың бигәйәт матур бер кыҙы бар ине.* М. Ғафури.

**БИҒӘЛӘШ** [*фарс.*] *с.* Аҡылға шыйыҡ; йүләр. *[Миңьямал:] Анау Маһһар тигән бигәләш өйөмә килеп инде лә әллә нимәләр һөйләнә.* С. Агиш./Еңелсә әрләп әйтелә. *[Емеш:] Абау, ун биш йәшем тулып үткән көйө пионерка булып йөрөгәнмен дәһә! Әй бигәләш!* З. Биишева.

**БИҒӘЛӘШЛӘНЕҮ** *к.* Биғәләшкә әйләнеү, биғәләш булыу; йүләрләнеү.

**БИДҒӘТ** [*ғәр.*] *и. иҫк.* Дингә ҡаршы нәмә.// *Бидгәт эш.* ■ *Кафыр һин, дәһри һин, бидгәт сығарҙың, төбөнә кит дозахтың, бар, газап тарт!* Ш. Бабич.

**БИДО́Н** [*рус.* ⟨*фр.*] *и.* Шыйыҡ нәмә һаҡлай торған цилиндр формаһындағы ҡапҡаслы ҡалай йәки пластмасса һауыт. *Кәрәсинле бидон. Һөт бидоны.*

**БИҘ** *и.* **1.** Тереклектәрҙең эске эшмәкәрлеге өсөн кәрәкле матдәләр эшләп сығара торған махсус ағза. *Агыу биҙе. Богаҡ биҙе. Йәш биҙе. Тир биҙе. Төкөрөк биҙе. Ҡоймос биҙе. Ҡалкан биҙе.*

**2.** Ауыртҡан ергә ҡалҡып сыҡҡан төйөр. *Биҙ калкыу.*

**3.** *диал. кар.* **оро**[1] 1.

**БИҘА** [*рус.* беда] *и. һөйл.* **1.** Башҡа төшкән ауыр хәл. *Бөтә көнө уның байҙа үткән айнымаған башы биҙанан.* Ҡ. Даян. / Мәшәҡәтле, насар нәмә. *Бесән эше бер биҙа булды.*

**2.** *киҫ. мәг.* Ҡайһы бер сифат һәм рәүеш менән килеп, уның мәғәнәһен көсәйтә. *Биҙа күп. Биҙа һәйбәт.* / Кәмләү, мыҫҡыллау рәүешендә әйтелә. *Харап инде! Биҙа икән!*

◆ **Биҙа түгел** бер ни түгел, анһат. *Был эш беҙгә биҙа түгел.* **Биҙа һалыу** юҡ-барҙы бәлә итеп ғауғалау; бәлә һалыу.

**БИҘАЛАНЫУ** *к. һөйл.* Ғауға һалып мыжыу, бәлә һалыу. *Бер көндө ауыртмаған тешен ауырта тип биҙалангас, .. алып киттем быны [катынды] районға.* Ш. Янбаев.

**БИҘАСЫЛ** *с. һөйл.* Юҡҡа-барға бәлә һалыусан; бәләсел. *Биҙасыл кеше.*

**БИҘҒӘК** *и.* **1.** Бер ҡалтыратып өшөтә, бер яндыра, ҡыҙҙыра торған йоғошло ауырыу. *Биҙгәк тотоу.*

**2.** *күсм.* Ҡомарлы, шашҡын тойғо. *Алтын биҙгәге.*

**3.** *диал.* Тапма.

◆ **Кесерткән биҙгәге** *кар.* **кесерткән.**

**БИҘГӘКЛӘҮ** *к.* Биҙгәк тотоп ауырыу.

**БИҘГӘЛӘК**[1] *и.* Ҙурлығы тауыҡ хәтле, арҡаһы һоро сыбар, ҡорһағы аҡ, аяғы оҙон йүгерек дала ҡошо; ҡарһаҡ туғаҙаҡ. *Биҙгәләк бәләкәй генә бер ырҙын яһап ала ла һәр вакыт шунда өйрөлөп бейей. Бейегән ырҙыны катып, ялтырап китә.* Һ. Дәүләтшина.

**БИҘГӘЛӘК**[2] *с.* Ҡолаға ылыҡмаҫ, ҡырағай (малға ҡарата). *[Айбулат:] Ул шайтан шикелле дөйәләр, балаларга түгел Сәйетҡол ағайҙың үҙенә лә баш бирмәй китә әле. Бигерәк тә анау Нар дөйә. Мокаш, Күк дөйә биҙгәләк.* Һ. Дәүләтшина.

**БИҘҘЕРГЕС** *с.* Йәнгә тейерлек; ялҡытҡыс. *Биҙҙергес кеше. Биҙҙергес көҙгө ямғыр.*

**БИҘҘЕРЕҮ** *к.* **1.** Бик ныҡ ялҡытып, ҡабат әйләнеп ҡарамаҫтай итеү. *Донъянан биҙҙереү. Өйҙән биҙҙереү.* / Яман күрһәтеп йәки ҡурҡытып һыуындырыу. *Кешенән биҙҙереү.* ■ *[Ҡатынга — Мәскәй:] Үҙенде үлтереп, өлкән вәзиренең катыны менән тормаһын тиһәң, батшаңды ул вәзирҙән тамам биҙҙерергә кәрәк* (Әкиәттән).

**2.** Теләктән ҡайтарыу; бүктереү. *Бер төрлө аш биҙҙерә.*

● *Һөйҙөргән дә кыҙыл тел, биҙҙергән дә кыҙыл тел.* Әйтем.

**БИҘЕЛ** *и. диал.* Ауылдан айырылып күсеп ултырған халыҡ.

**БИҘЕР** *и. диал.* Бүҫер.

**БИҘЕҮ** *к.* **1.** Бик ныҡ ялҡып, ҡабат әйләнеп ҡарамаҫтай булыу. *Тар кәберҙең күйынына керҙем — котолдом донъянан, сөнки биҙҙем донъянан, артык тораһым килмәне.* Ш. Бабич. / Яман күреп йәки ҡурҡып һыуыныу. *Кешенән биҙеү.* ■ *[Ҡарасәс:] Коштоң йоморткаһын тотһаң, ояһынан биҙә.* З. Биишева.

**2.** Теләк ҡайтыу. *Малай бер сак ашауҙан биҙҙе лә ҡуйҙы.* К. Мәргән.

● *Баланың аҙары булһа ла, биҙәре юк.* Мәҡәл.

**БИҘЛЕ** *с. диал.* Ҡарлы-ямғырлы, һыуыҡ елле (көнгә ҡарата); йонсоу. *Һалкынсарак, биҙлерәк көн ине.* Ә. Вахитов.

**БИҘЛӘТЕҮ** *к.* Ҡарлы, ямғырлы һыуыҡҡа әйләндереү. *Һыҙғырып көндө биҙләтеү.*

**БИҘЛӘҮ** *к.* **1.** Ҡарлы, ямғырлы һыуыҡҡа әйләнеү; йонсоуланыу. *Көн биҙләп тора.*

**2.** *күсм.* Кәйефһеҙләнеп, сырай һытыу. *Зәкиә апай, яҙғы көн кеүек, биҙләп тора.* Т. Килмөхәмәтов.

**БИҘЛӘҮЕК** *с. кар.* **биҙле.** *Биҙләүек көн.*

**БИҘРӘ** [*рус.* ведро] *и.* Һыу йәки бүтән нәмә ташый торған ҡылыслы һауыт; күнәк. *Биҙрә колағы. Биҙрә кылысы.* ■ *Әлимә .. биҙрә, көйәнтәләрен алып, Ҡорбанбикә менән һыуға китте.* Д. Юлтый.

**БИҘРӘТЕҮ** *к.* Теңкәне ҡоротоп, йонсотоу; йөҙәтеү. *Бер төрлө аш биҙрәтә. Көҙгө һыуык биҙрәтә.* ■ *Торҙом. Ләкин атка менге килмәй, биҙрәткән.* Н. Мусин.

**БИҘРӘҮ** *к.* Теңкә ҡороп, йонсоу; йөҙәү. *Буранда урамға сығырға биҙрәп тороу. Юклыктан биҙрәү.* ■ *Артык һөйләнмәһә лә, Әскәпъямал апай ҙа был тормоштан биҙрәне.* Р. Солтангәрәев.

**БИҘӘК** *и.* **1.** Матурлыҡ өсөн төшөрөлгән төрлө-төрлө һүрәт. *Алма биҙәк. Сәскә биҙәк. Эре биҙәк.* ■ *Ҡулымдағы көмөш балдағымдың ай менән үк йондоҙ биҙәге* (Халыҡ йырынан).

**2.** *күсм.* Йәм, матурлыҡ биргән нәмә. *Ер-күктең бар биҙәктәрен йыйып, бейек шыршы тора уртала.* М. Кәрим.

● *Ир бала йортка терәк, ҡыҙ бала йортка биҙәк.* Мәҡәл.

**БИҘӘКЛЕ** *с.* Биҙәге бар, биҙәк төшкән. *Биҙәкле тауар. Биҙәкле сынаяҡ.*

**БИҘӘКЛӘНЕҮ** *к.* **1.** *төш. кар.* **биҙәкләү.** *Сәғәттең тышы таштар менән биҙәкләнгән.* Д. Юлтый.

**2.** *ҡайт. кар.* **биҙәкләү.** *Тәҙрә биҙәкләнеп туңған.*

**БИҘӘКЛӘТЕҮ** *к. йөкм. кар.* **биҙәкләү.**

**БИҘӘКЛӘҮ** *к.* **1.** Биҙәкле итеү. *Биҙәкләп буяу. Биҙәкләп сигеү.* ■ *Ҡышкы селләнең әсе һыуығы тәҙрәнең тышкы катлауын әллә ниндәй матур биҙәктәр менән биҙәкләп ал[ған].* Һ. Дәүләтшина.

**2.** *күсм.* Йәмле, матур итеү; биҙәү. *Урал яландарын биҙәкләп сук-сук булып үҫә миләүшә.* Ғ. Амантай.

**БИҘӘКСЕ** *и.* Биҙәк төшөрөүсе, биҙәк эшләүсе.

**БИҘӘЛ** *и. кар.* **абруй.** *Эй һары бал, һары бал, һары балды кем эсер? Битендә биҙәл йәйнаған ир-аҙамат — шул эсер* (Ҡобайырҙан).

**БИҘӘЛЕҮ** *к. төш. кар.* **биҙеү** [1]. *Сәскә менән биҙәлгән.*

**БИҘӘЛЕШ** *и.* Ниҙеңдер биҙәлеү йәһәтенән тышҡы күренеше. *Китаптың матур итеп биҙәлеше.* ■ *Кәңәшмәлә катнашыусылар мәктәп, балалар баксаһы һәм культура-ағартыу йорттарында булды, уларҙың төҙөклөгөн һәм биҙәлешен ҡараны.* «Совет Башҡортостаны», 1986, 1 июль.

**БИҘӘМЕС** *и. кар.* **биҙәүес.**

**БИҘӘМӘ** *и. диал.* Биҙәк.

**БИҘӘНДЕРЕҮ** *к. йөкм. кар.* **биҙәнеү.**

**БИҘӘНЕҮ** *к.* **1.** Күҙгә, биткә буяҡ, кершән яғып, матурланыу. *Мәрйәм .. иң яраткан зәңгәр күлдәген кейеп, көҙгө алдында оҙаҡ ҡына биҙәнде.* Р. Низамов.

**2.** Биҙәүестәр тағып, кейенеп-яһанып, матурланыу. *Ҡыҙҙарының түшендә ҡиммәтле нәмәләр ялтырай. Егеттәре үҙҙәренә башка биҙәнгән. Бөтәһе лә тиерлек якшы костюм кейгән.* С. Агиш. *Ҡыҙ балалай биҙәнгән төлкөһө күп Урал тау* (Ҡобайырҙан).

**3.** *күсм.* Матурлыҡҡа сумыу, матур төҫ алыу. *Ҡала урамдарындағы ағастар йәшелгә биҙәнә башлаған.* Н. Мусин.

**БИҘӘНЕШЕҮ** *к. урт. кар.* **биҙәнеү.**

**БИҘӘР** [1] *и.* **1.** Биҙәкле-биҙәкле семәр; биҙәк. *Сынаяктың биҙәре уңып бөткән.*

**2.** *с. мәғ. күсм.* Төҫкә, башҡа матур; сибәр. *Биҙәр кеше.*

**БИҘӘР** [2]: **биҙәр булыу** бик ныҡ биҙәү; биҙрәү. *Зәйнәп донъянан биҙәр булып торғанда ғына был хатты алды.* М. Ғафури.

**БИҘӘР-БИҘӘР** *с.* Күҙҙең яуын алып, земберләп торған (биҙәк йәки семәргә ҡарата). *Ак сынаяҡ биҙәр-биҙәр, ҡыҙамын биҙәгенә* (Халыҡ йырынан). *Ҡамсы һабы биҙәр-биҙәр ун икенән үргәнгә* (Халыҡ йырынан).

**БИҘӘРЕҮ** *к. диал. кар.* **биҙеү** 1.

**БИҘӘРЛЕ** *с.* Төрлө-төрлө биҙәкле. *Биҙәрле һауыт. Биҙәрле тауар.*

**БИҘӘРЛӘНЕҮ** *к. төш. кар.* **биҙәрләү** [1]. *Биҙәрләнгән бай сәсәк ҡурай ҙа булыр һулыған һуң* (Ҡобайырҙан).

**БИҘӘРЛӘҮ** [1] *к.* **1.** Биҙәкле итеү; биҙәкләү. *Ауылдың биҙәрләп эшләнгән киң ҡапҡаһынан кереүем булды — гөлдөр итеп ебәрҙе лә, ҡойоп ямғыр яуа башланы.* Ә. Вахитов.

**2.** *күсм.* Йәмгә, матурлыҡҡа күмеү; биҙәү. *Яҙ килә, матур ай килә, биҙәрләп ерҙең өҫтөн.* А. Игебаев.

**БИҘӘРЛӘҮ** [2] *к. диал.* Биҙрәү. *Ауыл тып-тын: һәр йән әйәһе, туңыуҙан биҙәрләп, үҙенең йылы мөйөшөнә һыйынған.* З. Солтанов.

**БИҘӘҮ** [1] *к.* **1.** Күҙгә, биткә буяҡ, кершән һөртөп матурлау.

**2.** Төҫ, йәм бирерлек нәмәләр менән матурлау; матур итеү. *Бүлмәне һүрәттәр менән биҙәү.* ■ *Бына, егет, шәл ябырһың, буйын биҙәп торһон тип* (Туй йырынан). / *күсм.* Яҡшы сифат өҫтәп матурлау. *Матур тел романды биҙәй. Декорация спектаклды биҙәй.*

● *Атка менгән ил гиҙәр, батыр егет ил биҙәр* Әйтем. *Битеңде биҙәмә, акылыңды биҙә.* Әйтем.

**БИҘӘҮ** [2] *с.* **1.** Бала таба алмаған йәки бала булдыра алмаған. *Биҙәү ир. Биҙәү катын. Биҙәү булыу.* ■ *Яңғыҙ булыр егеткә биҙәү катын тап булыр* (Ҡобайырҙан). *[Шәмсинур — Ҡотлозамангa:] Бер һиңә бала кәрәкмәне, һәр сак буйҙаҡ йәшәгең килде. Һине тыңлап, мәңгегә*

*биҙәү калдым.* Ғ. Вәлиев. **Аҡ биҙәү** бер бала табып туҡтаған ҡатынға ҡарата әйтелә.

**2.** Үрсем бирмәгән (мал, үҫемлеккә ҡарата). *Биҙәү бейә. Биҙәү сәскә.* ■ *[Әбләй:] Толпарҙан тыуған ҡолон һин, һөйгән атым минең һин, татлы йоҡомдо ҡалдырып, биҙәү киткән атым һин.* «Ҡара юрға».

**БИҘӘҮЕС** *и.* Кемде йәки нимәлер ҙә булһа биҙәү, уға йәм биреү өсөн хеҙмәт иткән затлы йәки матур нәмә. *Алтын биҙәүестәр. Ёлка биҙәүестәре.*

**БИЗЕК** *и.* Бәкәлсәй уйнағанда отошто билдәләй торған бер аяҡ баҫымы хәтле үлсәү бәрәмеге.

**БИЗМӘН** [*рус.* безмен] *и.* **1.** Һалмауырлы йәки пружиналы, ҡулға тотмалы бер табаҡлы үлсәүес. *Бизмән менән үлсәү.*

**2.** *күсм.* Һәр төрлө нәмәнең үлсәүе. *Һалып маташтым мин яҙмышымды бәхет бизмәненә.* М. Кәримов.

♦ **Бизмәнгә ултыртыу** алдап кәм үлсәү. **Үҙ бизмәнең менән** үлсәү кешегә үҙеңдән сығып баһа биреү.

**БИЗМӘНЛӘҮ** *к.* **1.** Бизмән менән үлсәү. *Бизмәнләп һатыу.*

**2.** *күсм.* Аушан-таушан сайҡалыу. *Яшыҡ аттар һабанды тарта алмай бизмәнләп тик тора.* Ж. Кейекбаев.

**БИЗМӘНЛӘШЕҮ** *к.* Ваҡлашып һатыулашыу. *Ике тинлек нәмәне бизмәнләшә.*

**БИ́ЗНЕС** [*рус.* ⟨*ингл.*] *и.* Табыш, шәхси байлыҡ өсөн башҡарылған кәсеп, оҫта афёра һ. б.

**БИЗНЕСМЕ́Н** [*рус.* ⟨*ингл*]. *и.* Бизнес менән шөғөлләнгән кеше.

**БИЗНӘКӘҮ** [1] *и. диал.* Ҡырҡтартмасы.

**БИЗНӘКӘҮ** [2] *с. диал.* Үсексән.

**БИЗО́Н** [*рус.* ⟨*лат.*] *и.* Төньяҡ Америкалағы ҡырағай үгеҙ.

**БИК** [1] *и.* Ишек, ҡапҡаны, ҡапҡасты кеше аса алмаһын өсөн эләктереп ҡуя торған ҡулайлама. *Ишеккә бик ҡуйыу. Ҡапҡаға бик һалыу.* ■ *[Әбей:] Ҡыҙым, өй түбәһендә .. һары һандыҡ булыр. Шуны алып ҡайт. Ҡайтып өйгә инмәйенсә, биген асма* (Әкиәттән).

**БИК** [2] *р.* Сиктән тыш, саманан тыш дәрәжәлә; үтә, ғәйәт. *Бик тиҙ. Бик көслө.* ■ *Ауыртыуы бик аҙ ғына, бер нисә минутҡа ғына, тынған арала тирә-яҡҡа боролоп ҡарап алам.* С. Агиш. *Ниңә бик-бик матур була икән сәскә атҡан саҡта сирендәр.* Ғ. Сәләм.

**БИККЕС** *и. диал. ҡар.* **бик** [1].

**БИКЛӘНЕҮ** [1] *к.* **1.** *төш. ҡар.* **бикләү** [1] 2. *Ишек бикләнде. Мал аҙбарға бикләнгән.* ■ *Бикләнделәр тимер ҡапҡалар, асылырлыҡ түгел ҡаҡһалар.* М. Кәрим.

**2.** *ҡайт. ҡар.* **бикләү** [1]. *Бүлмәгә инеп бикләнеү. Бикләнеп ултырыу.*

**БИКЛӘНЕҮ** [2] *к. төш. ҡар.* **бикләү** [2]. *Ятҡа бикләнгән шиғыр.*

**БИКЛӘТЕҮ** [1] *к. йөкм. ҡар.* **бикләү** [1]. *Ҡапҡаны бикләтеү.*

**БИКЛӘТЕҮ** [2] *к. йөкм. ҡар.* **бикләү** [2]. *Шиғырҙы бикләтеү.*

**БИКЛӘҮ** [1] *к.* **1.** Бик һалып ябыу. *Ишекте бикләү. Йоҙаҡ менән бикләү. Биккә бикләү.* ■ *Әсәһе Кәримдең ҡайтҡанын оҙаҡ көткәндер ахыры. Ҡапҡа менән соланды ла бикләмәгән.* Я. Хамматов.

**2.** Кемде йәки нимәлер бик һалып тыштан ябыу. *Бикләп алыу. Бикләп ҡуйыу. Бикләп тотоу.* ■ *Алпамышаның үҙен ер аҫтына, зинданға, атын ете ҡат тимер ҡапҡалы һарайға бикләп ҡуйҙылар, ти.* „Алпамыша".

**БИКЛӘҮ** [2] *к.* Ятлау. *Шиғырҙы ятҡа бикләү. Ҡабатлау таблицаһын бикләү.*

**БИКРЕ** *и.* Ҡыҫҡа моронло, ҡабырсаҡ тәңкәле балыҡ. *Беҙҙең һыуҙарҙа .. бәрҙе, бағыр, ҡыҙыл балыҡ, ала балыҡ һәм бикре кеүек ҡиммәтле балыҡтар ҙа тотола.* „Совет Башҡортостаны", 1968, 13 февраль.

**БИКСЕРЕҮ** *к. диал. ҡар.* **сүгеү** 2. *Ҡартайып биксереү.*

**БИКӘ** *и.* **1.** Бай бисә, хужа ҡатын. *Баярзың бикәһе оҙон ҡулдәген һөйрәлдереп, күҙен аҡайтып килеп инә.* Ф. Ғәйнетдинов, М. Моратов.

**2.** Ҡатын-ҡыҙға ололап өндәшеү һүҙе.

**3.** (*баш хәреф менән*) Ҡатын-ҡыҙ исеме.

**БИКӘБАШ** *и.* Ҡара-ҡаршы телмә япраҡлы, ал суҡ сәскәле ҡый үләне.

**БИКӘМ** *и.* Ҡатынға ирҙең апаһы; ҡәйенбикә. *Фатиманың ҡәйнәһе һәм бикәмдәре йорт эсендәге арҡыры ятҡан ағасты буй ҙа бороп һалманы.* Ж. Кейекбаев.

**БИКӘР** [*фарс.*] *с. иҫк.* **1.** Файҙаһыҙ, буш, мәғәнәһеҙ. *Бикәр һүҙ.* ■ *Ғүмерем үтте бикәрерәк, буш ел ҡыуҙым да ҡыуҙым.* Ш. Бабич.

**2.** *р. мәғ.* Юҡҡа, бушҡа. *Йәштәр уны [Ғимаҙиҙы] ахыры бикәр маҡтай.* С. Ҡудаш.

**3.** *бәйл. функцияһында* Сығанаҡ килештәге һүҙҙәр менән „башҡа", „тыш" мәғәнәһен бирә. *Ҡыҙрастың ошо баксанан бикәр йәшәр әмәле юҡ.* М. Хәйҙәров.

● *Бикәр эш битһеҙ булыр.* Мәҡәл. *Ирҙең йәше ике илле: береһе — шәкәр, береһе — бикәр.* Мәҡәл.

**БИКӘРГӘ** *р.* Бушҡа, юҡҡа. *Бикәргә әрләү.* ■ *Инде атын бикәргә рәнйеткәненә батыр бик үкенә, сөнки уны бөтә мөлкәтенән артыҡ күреп ярата, иң тоғро юлдашы һанай ине.* „Ҡуҙыйкүрпәс менән Маянһылыу".

**БИКӘС** *и.* **1.** Ирҙең һеңлеһе (ҡатынына ҡарата); ҡәйенһеңле.— *Еңгә, еңгә, ишек ас!* — *Төндә йөрөр бикәсем юҡ, бикәсем ситтә, кейәүҙә* (Әкиәттән).

**2.** Йәш бикә. *[Юрға:] Өҫтөмдәге бикәсем дә үҙемә генә тиң икән.* „Ҡара юрға".

**3.** *диал. ҡар.* **кәләш** 2.

**БИҠАСАП** *и.* Буй-буй итеп һуғылған тар иңле ҡалын ебәк туҡыма. *Камзуллыҡ биҡасап һатып алыу.* // *Биҡасап сапан. Биҡасап күлдәк.*

**БИЛ** *и.* **1.** Кәүҙәнең арҡа менән янбаш араһындағы нәҙек өлөшө. *Билде ауырттырыу. Билдән яҙыу. Билде биртендереү. Билдән бөгөлөү. Билдән яҙыла алмау.* ■ *Ҡыҫып та ғына ҡыҫып һөйөр инем, ҡыҙғанам шул нәҙек билҡәйен* (Халыҡ йырынан). **Бил быуарҙан** бил тәңгәленән. *Бил быуарҙан һыуға батыу.* / Кейемдең шул тәңгәлдәге өлөшө. *Билһеҙ пальто. Оҙон билле күлдәк.*

**2.** Берәй нәмәнең уйылыңҡырап йәки нәҙегәйеңкерәп торған урта өлөшө. *Тауҙың биле. Ҡыҙыл билле пәрәник.* ■ *Бригадир .. аяғына әле биле лә төшмәгән быймаһын кей[ҙе].* Б. Бикбай. *Әхмәҙулла бабайҙың биле бөгөлөп төшкән ситәнһеҙ ҡырандасына .. ултырҙым.* Р. Низамов.

♦ **Бил биреү** көрәштә еңелеү. **Бил бөгөү** көс түгеп эшләү. *Билде бөкмәй, күкрәк көсөн түкмәй, бер кемгә лә килмәй бер тин дә.* Д. Юлтый. **Бил быуыу** 1) ҙур теләк менән берәй эшкә әҙерләнеү; 2) хәл ҡылымдың *-п* формаһы менән килгәндә, эшкә ихласлыҡ, дәрт менән тотоноу мәғәнәһен бирә. *[Йәнбикә — иренә:] Кешеләрҙең ирҙәре бил быуып ер һелкетеп эшләп йөрөй.* Ҡ. Даян. **Билгә һуғыу** ҡыйынлыҡ килтереү, тотҡарлыҡ яһау. *Бигерәк тә Әхмәҙиҙең китеүе билгә һуҡты. Совет эшен якшы алып бара ине ул.* Һ. Дәүләтшина. **Билде биштән быуып** ҙур ихласлыҡ, дәрт һалып. *[Сабира:] Беҙ билде биштән быуып ҡоҙа-ҡоҙағыйҙарҙы һыйларбыҙ.* Һ. Дәүләтшина. **Биле ер күрмәгән** көрәштә һис еңелмәгән, көслө, батыр. *Сәлмән батыр биле ер күрмәгән, Бәхтейәрҙе кеше уҙмаған .. шөһрәт алған ике уҙаман.* Ҡ. Даян. **Бил яҙмай** туҡтау белмәй, ял итмәй (ниҙер эшләү). *Көйҙөрөп барған ҡояш нурҙары аҫтында ураҡсылар бил яҙмай арыш ура.* Б. Хәсән. **Ҡырмыҫҡа бил** ҡуш-ар-ҡушар тоташҡан дүрт ромб рәүешендәге биҙәк. **Биш билле** биш ҡыйыҡ ҡуйып тегелгән. *Тайба ҡоҙағый [Емешкә] биш билле ҡыҙыл соға камзул тегеп кейҙерҙе.* З. Биишева.

● *Илдең биле ныҡ булһа, ирҙең күңеле түк булыр.* Мәҡәл.

**БИЛАЙ** *и. диал.* Сәйгүн.

**БИЛАЛ** *и.* **1.** Ҡарға ҙурлыҡ, киң оҙон ҡанатлы; тар оҙон ҡойроҡло, ҡойроҡ төбө аҡ төҫлө йырткыс ҡош (түбәндән оса). *Тирә-як тын. ...Тик яңғыҙ билалы ғына ҡанат ҡаҡмайынса, күҙен ергә тегеп, сыскан һағалай.* Р. Ниғмәти.

**2.** *диал.* Төйлөгән.

**3.** (*баш хәреф менән*) Ир-ат исеме.

**БИЛБАУ** *и. кар.* **билғау.**

**БИЛГЕ** *и.* **1.** Айырып күрһәтеү өсөн ҡуйылған тамға; билдә. *Билге ҡуйыу.* ■ *Ҡашына арыҫландың килә батыр, үлгәнен аныҡлап белә батыр, быға инде бер билге һалайым тип, арыҫландың шунда телен телә батыр.* „Бабсаҡ менән Күсәк“. *Билге лә генә сәнстем ай биләнгә Шәүрә килен киләм дә тигәнгә* (Халыҡ йырынан)./Ниҙәндер һуң ҡалған эҙ. *Тотҡан, тейгән бер нәмәлә бармаҡтың билгеһе ҡала.*

**2.** Ниҙелер ҡылыҡһырлап күрһәткән һыҙат; ишарат, билдә. *Йылмайыу билгеһе. Ҡарға тауышы — яҙ билгеһе.*

**3.** Хәбәр биреү, белдереү өсөн яһалған ишарат. *Теге кеше .. әсе итеп һыҙғырып ебәрҙе. „Әһә, билге бирә“,— тип уйлап алды Яҡуп.* Б. Бикбай.

**4.** Үҫмер ир балалар уйыны (эсле-тышлы ике түңәрәк һыҙылып уртаға ҡолға ҡаҙала; тышҡы түңәрәктәге кешеләр шул ҡолғаға ҡул тейҙерергә тырыша; эске түңәрәктәгеләр яҡын ебәрмәй, уларҙың аяғына тибеп „ҡатыра“; тышҡы түңәрәктән берәү ҡулын тейҙерһә, ике төркөм урын алмаша). *Билге таяғы. Билге тибеү. Билге уйнау.*

**БИЛГЕЛЕ** *с.* **1.** Ни һәм ниндәй икәне мәғлүм, таныш; билдәле. Билгеле хәбәр. Билгеле эш. ■ *Төлкө эҙе бик билгеле яңы яуған ҡарҙарҙа* (Халыҡ йырынан).

**2.** *кар.* **билдәле** 2, 3.

**3.** *инш. мәғ.* Эш-хәлдең асыҡлығын белдергәндә әйтелә; билдәле. *Эт, билгеле, өрөп ҡаршылаңы, шығырланы ҡапҡа тауышы.* М. Хәй.

● *Май сүлмәге тышынан билгеле.* Мәҡәл.

**БИЛГЕЛӘНЕҮ** *к. төш. кар.* **билгеләү.** *Билгеләнгән көн.*

**БИЛГЕЛӘҮ** *к.* **1.** Билге, тамға һалыу. *Батшаның уртансы ҡыҙы үҙе һайлап, билгеләп ҡуйған алмаһын ашаған* (Әкиәттән).

**2.** Алдан уйлап тәғәйенләү; билдәләү. *Көн билгеләү. Һәр бригадаға эш билгеләү.*

**3.** Тәғәйенләп эшкә, урынға ҡуйыу; тәғәйенләү. *Бригадир итеп билгеләү.*

**БИЛҒАУ** *и.* Билде быуа торған оҙон тауар йәки бау киҫәге. *Ҡара буҫтау кәзәкей кейгән, билен ҡыҙыл ебәк билғау менән быуған .. егет әйәрҙән һикереп төштө.* Һ. Дәүләтшина.

♦ **Билғау аҫтында бер ҡорһаҡ** яңғыҙ кешегә ҡарата әйтелә. **Билғау аҫты бушау** асығыу. *[Хәйретдин:] Әсәһе, самауырыңды ҡуяһыңмы әллә? Билғау аҫты бушаны.* Я. Хамматов.

**БИЛДӘ** *и.* **1.** Айырып күрһәтеү есен ҡуйылған тамға; билге. *Билдә ҡуйыу. Билдә һалыу. Билдәгә ҡарап табыу.*/Ниҙәндер һуң ҡалған эҙ. *[Байрамбикә] тирә-яғына ҡарай, .. көрәшеү билдәһе булған күлдәк йыртыҡтарын күрә* [Хикәйәттән].

**2.** Шартлы рәүештә бер мәғәнә менән алынған тамға. *Ҡушыу билдәһе. Математик билдә. Нота билдәләре. Өндәү билдәһе. Тигеҙлек билдәһе. Тыныш билдәләре. Һорау билдәһе.*

**3.** Ниҙелер ҡылыҡһырлап күрһәткән һыҙат; ишарат; билге. *Аслыҡ билдәһе. Шатлыҡ билдәһе.* ■ *Нәҫелдән килгән билдәләр менән иҫәпләшмәй, юртаҡ атты йөк ташырға; йөк атын сабырға өйрәткән кеше уңа алмаҫ.* «Совет Башҡортостаны», 1965, 13 май. *Ололарҙы ололау — яҡшылыҡтың билдәһе, кеселәрҙе кеселәү кешелектең билдәһе* (Ҡобайырҙан)./Хәбәр биреү, белдереү өсөн яһалған ишарат. *Теге яҡтан бер быҙлаған ут «аңлашылды» тигән билдә булған.* С. Кулибай.

**4.** Уҡыусының белем кимәлен һәм тәртибен күрһәткән баһа. *Хәмзә класта шәп уҡыусыларҙан түгел, шулай ҙа быйыл уҡыу башынан бирле насар билдә алғаны юҡ.* С. Агиш.

**БИЛДӘК: телгә билдәк** теле, һөйләүе кәмселекле; һаҡау. *Телгә билдәк кеше.*

**БИЛДӘЛЕ** *с.* **1.** Ни һәм ниндәй икәне мәғлүм, таныш; билгеле. *Билдәле мәсьәлә. Билдәле сәбәп.* ■ *Минең тиҫкәрелек Урманцевға билдәле ине. Бер-ике һүҙ менән димләп ҡараны ла, артыҡ ҡыҫтаманы.* С. Агиш.

**2.** Эше, хеҙмәте менән таныҡлы. *Билдәле механизатор. Билдәле яҙыусы.* ■ *Ул [Мәүлет] ике ауылға билдәле кеше, эште уйлап эшләй торған кеше.* Ғ. Дәүләтшин.

**3.** Ниндәй ҙә булһа үҙенсәлекле; тейешле. *Ырым — тәбиғәттәге һәм кешеләрҙәге насар яктарҙы бөтөрөү өсөн билдәле бер тәртип һәм хәрәкәт менән әйтелгән әйтем.* Ғ. Амантай.

**4.** *инш. мәғ.* Эш-хәлдең бәхәсһеҙлеген, асыклығын белдергәндә әйтелә; билгеле. *Сәрби еңгәм генә .. бер аҙ ашарға тапкан була. Өс достоин кешегә уның тапканы ғына, билдәле, етмәй.* Д. Юлтый.

♦ **Билдәлә һан** *мат.* бирелгән һан.

**БИЛДӘЛӘМӘ** *и.* Ниҙеңдер йөкмәткеһен, асылын билдәләгән аңлатма. *Билдәләмә биреү.*

**БИЛДӘЛӘНЕҮ.** *к. төш. кар.* **билдәләү.** *Билдәләнгән сәғәттә барып етеү.* ■ *Совет гражданлығын алыу һәм юғалтыу нигеҙҙәре һәм тәртибе СССР гражданлығы тураһындағы закон менән билдәләнә.* Башкорт АССР-ының Конституцияһы, 1984. *Вазифалы кешеләр граждандарҙың тәкдимдәрен һәм ғаризаларын билдәләнгән срокта карарға, уларға яуап бирергә һәм тейешле саралар күрергә бурыслы.* Башкорт АССР-ының Конституцияһы, 1984.

**БИЛДӘЛӘНЕШ** *и.* Ниҙеңдер төп функцияһы, алдан билгеләп куйылышы. *Социалистик үҙгәртеп короуҙар хеҙмәттең билдәләнешен дә, эшсе һәм крәҫтиән массаларының хеҙмәткә мөнәсәбәтен дә тамырынан үҙгәртте.* «Совет Башкортостаны», 1986, 26 февраль.

**БИЛДӘЛӘТЕҮ** *к. йөкм. кар.* **билдәләү.**

**БИЛДӘЛӘҮ** *к.* **1.** Билдә куйыу, билдә һалыу. *Кыркылырға тейешле ағастарҙы билдәләп сығыу.*

**2.** Ниндәйҙер билдәгә карап асыклау. *Ике яктан да артиллерия атышы башланды. Беҙ, шуға карап, үҙебеҙҙең окопты билдәләнек.* Д. Юлтый. *Батырҙар .. ер аҫтындағы кыҙҙың тәңгәлен билдәләп алған. Ул теге майҙандың уртаһына тура килгән* (Әкиәттән).

**3.** Ниҙелер айырып телгә алыу, барлык-юклығын айырып әйтеү. *Эште насар үтәгән укыусыларҙың да бәләкәй генә уңыштарын күрә белергә, билдәләп китергә кәрәк.* «Башкортостан укытыусыһы», 1968, № 3. *Өфө эмаль һауыт-һаба заводының һәйбәт эше билдәләп үтелде.* (Совет Башкортостаны), 1964, 30 апрель.

**4.** Кем йәки ниҙер хөрмәтәнә тантана ойоштороу. *Башкорт Автономиялы Совет Социалистик Республикаһының юбилейын билдәләү.*

**5.** Алдан уйлап тәғәйенләү, аныклау. *Вакыт билдәләү. Эш билдәләү. Хак билдәләү.* ■ *Батша йүгереш урынын билдәләнгән* (Әкиәттән).

**6.** Тәғәйенләп эшкә, урынға куйыу; тәғәйенләү. *Фатима Мырҙабаеваны бригадир итеп билдәләгәдәр.* Б. Бикбай.

**БИЛДӘМӘ** *и. диал. кар.* **билләмә** 1.

**БИЛДӘҺЕҘ** *с.* **1.** Билдәле түгел, анык түгел. *Билдәһеҙ сәбәп.* ■ *Бәлки, улым, һиңә билдәһеҙҙер, яңылыктар байтак бар беҙҙә.* Ғ. Амантай.

**2.** Таныш түгел; ят. *Билдәһеҙ кеше.* ■ *Урманда әллә ниндәй билдәһеҙ коштар тауышы яңғырай.* З. Биишева.

♦ **Билдәһеҙ һан** *мат.* эҙләгән һан.

**БИЛДӘҺЕҘЛЕК** *и.* Билдәле булмаған хәл.

**БИЛДӘШ** *с.* Билдән аркыры ак һыҙатлы (һыйыр, кәзәгә карата); *Ул кышы беҙҙең бесән мул булды. Туя ашаткас, билдәш һыйырыбыҙ ҙа һөттө етерлек бирҙе.* Н. Мусин. *Билдәш кәзә — биле ала, тауға сыкһа, бүре ала* (Халык йырынан).

**БИЛЕН: билен алыу** куркыу.

**БИЛЕНЛӘТЕҮ** *к. йөкм. кар.* **биленләү** 1. *[Хәйрулла — Әнисәгә:] Нишләп шул тиклем кыскыраһың? Һыйырҙарҙы биленләтәһең бит.* З. Хисмәтуллин.

**БИЛЕНЛӘҮ** *к.* **1.** Капыл куркыу (малға карата); өркөү. *[Шәрифтең] көскә йыйып алып килә яткан тайҙары биленләп, төрлөһө төрлө якка туҙышып сыкты ла китте.* К. Киңйәбулатова/Капыл куркып кыскырыу.

**2.** *диал. кар.* **өҙлөгөү.**

**БИЛЁТ** [*рус.* ⟨ *фр.*] *и.* **1.** Ниҙәндер файҙаланыу хокуғы өсөн түләп алған документ. *Кино билеты. Поезд билеты. Трамвай билеты.* ■ *[Йәнтимер:] Бөгөн бик һәйбәт театр ҙа була икән, икебеҙгә лә билет алдым.* С. Агиш.

**2.** Берәй ойошмала, партияла ағзалыкты, вазифаға мөнәсәбәтлекте күрһәткән документ. *Комсомол билеты. Партия билеты. Профсоюз билеты. Студент билеты. Хәрби билет.*

**3.** Имтихандағы һорауҙар яҙылған кағыҙ. *Билеттағы һорауҙарға яуап биреү.*

♦ **Ак билет** 1) хәрби хеҙмәткә ярактһыҙлыкты белдергән таныклык; 2) *һөйл.* шул. таныклыктың эйәһе. *Хисбулланың уң күҙе күрә карау булғанға ак билет булып, һуғышка китмәй калды.* З. Биишева. **Йәшел билет** *иҫк.* хәрби хеҙмәттән вакытлыса калдырылғанлыкты белдергән таныклык. *Беҙҙе 1915 йылдың яҙында каралырға сакырҙылар. Ләкин мине һалдатка алмай, бер йылға йәшел билет биреп калдырҙылар.* Т. Йәнәби. **Кәзә билеты** *иҫк.* эштән кыуылғанлыкты күрһәткән документ. **Сакырыу билеты** берәй тантанаға йәки тамашаға сакырған түләүһеҙ документ.

**БИЛИСТИКЛАЛ** [*ғәр.*] *р. иҫк. кит.* Үҙ аллы рәүештә, үҙ аллык менән. *Билистиклал идара итеү.*

**БИЛКӘ** *и. диал. кар.* **билен** [1].

**БИЛЛЕК** *и.* **1.** Билде быуа торған бау. *Күлдәк биллеге. Плащ биллеге.*

**2.** Өҫ кейеменең биленә арттан тар ғына итеп куйылған тукыма киҫәге. *Пальтоның биллеге.* ■ *Бишмәт яңы мода менән тегелгән: яғаһы киң, артына йәбештереп тегелгән биллеге лә бик килешле итеп биленә генә куйылған.* Ф. Рәхимғолова.

**3.** Ышлыяның бил тәңгәленән һыртлығы менән буйлығын тоташтырып торған кайышы.

**4.** *диал. кар.* **күкрәк** 4.

**БИЛЛЬ** [*рус.* ⟨ *ингл.*] *и.* АКШ һәм Англияла: закондар сығарыу органдарына тәкдим ителгән закон проекты.

**БИЛЛӘМӘ** *и.* **1.** Ит түшкәһенең бил өлөшө, малдың бил ите.

**2.** *диал. кар.* **биллек** 3.

**БИЛЛӘҺИ** [*ғәр.*] *ымл.* Ниҙеңдер раҫлығына ышандырыр өсөн әйтелә.— *Мин укыусы, мин йыраусы, мин даһи. Уҙҙырырмын мин даһиҙан, билләһи!* Ш. Бабич.

**БИЛЛӘШЕҮ** *к.* Билдән алышыу, билдән тотоп көрәшеү. *Майҙанда Хөсәйен ҡалғайны, уның менән көрәшергә Мәғәфүр сыҡты. Улар бик ҡыҙыу билләшә башланы.* Ж. Кейекбаев.

**БИЛМӘН** [*рус.* пельмени] *и.* Йоҡа сөсө ҡамырға тапаған, тәмләгән ит бөгөп, һыуза бешергән аш. *Билмән бешереү. Билмән яһау.* **Эремсек билмәне** *ҡар.* **сүсбәрә.**

**БИЛСӘ** *и. диал.* Бөйөрсә.

**БИЛСӘН** *и.* Ҡатмарлы сәскәләләр ғаиләһенә ҡараған сәнскәк япраҡлы ҡый үләне. *Ҡара билсән.* ■ *Көлтәгә эләгеп ҡалған ҡуҙлут ҡатыш билсәндән Сәгиҙәнең беләктәре бүртенеп сыҡты.* М. Тажи. **Һары билсән** ҡатмарлы сескәләләр ғаиләһенә ҡараған һөтлө һуты булған, һары сәскәле ҡый үләне.

**БИЛТЕР** *и.* **1.** Аяҡтың йөҙлөк тәңгәленән аҫҡы нәҙегерәк өлөшө. *Билтер ауыртып тора.* /Аяҡ кейеменең шул тәңгәлдәге өлөшө. *Бейек билтерле аяҡ кейеме.* **Билтер башы** аяҡ кейеменең билтеренән алып моронона тиклемге өлөшө. *Зөһрә теккән ҡара итек билтер башын тар итеп* (Халыҡ йырынан).

**2.** *диал. ҡар.* **билән** [1]. *Бейек кенә тауҙың билтеренә ҡарҙы ғына бурап килтерҙе* (Халыҡ йырынан).

**БИЛТӘК** *с.* Әйләнәһе быуған һамаҡ нәҙек билгә ҡарата. *Биле билтәк.*

**БИЛЬЯРД** [*рус.* 〈*фр.*] *и.* Тирәсле өҫтәлдә, оҙон таяҡ менән төртөп уйнай торған шар уйыны. *Бильярд өҫтәле. Бильярд уйнау.*

**БИЛӘМ** *и.* **1.** Эшләгәндә билеп алырлыҡ бер буй ер; ал. *Ана, дуҫтар ҡалмай минең арттан, кәмей бара билөм араһы* С. Әлибаев.

**2.** Кем йәки низер билеп торған ер; биләмә. *Шул арала солоҡ янына урманда билөм ҡарап йөрөгән бер кеше килеп сыҡкан.* Ж. Кейекбаев. /*иҫк.* Буйы ҡырҡ, иңе туғыҙ сажинлы ер.

**БИЛӘМЕС** *и. диал.* Биләүес.

**БИЛӘМЛӘҮ** *к.* Сик-ситен билдәләп урын, ер биләү.

**БИЛӘМӘ** *и.* Кем йәки низер билэп торған ер; билөм. *Совхоз биләмәһе.*

**БИЛӘН** [1] *и.* Ике тау араһындағы тәпәшәгерәк ер. *Ирәндектең Сакабай биләне тип исемләнгән матур урыны бар. Шул билән аша ялан ягына арба юлы үтә.* С. Кулибай.

**БИЛӘН** [2] *с.* Нәҙек билле, биле нәҙек.

♦ **Билән булыу** биртенеү; **бил тайыу.**

**БИЛӘН** [3] *и. диал. ҡар.* **бирән** 1. *Билән ауырыуы.*

**БИЛӘНЕҮ** [1] *к. төш. ҡар.* **биләү** [1]. *Инде матур ерҙәр .. бай тарафынан биләнгән.* Т. Хәйбуллин.

**БИЛӘНЕҮ** [2] *к. төш. ҡар.* **биләү** [2]. *Сабый бала ҡат-ҡат биләнгән.*

**БИЛӘНКЕ** *с.* Биртенгән билле; билһеҙ. *Биләнке булыу.*

**БИЛӘҮ** [1] *к.* **1.** Ниҙелер үҙ милкендә, үҙ ҡарамағында тотоу. *Ер биләү.* ■ *Колхоздар биләгән ер уларға түләһеҙ һәм срокһыҙ файҙаланыу өсөн беркетелә.* Башҡорт АССР-ының Конституцияһы, 1984. *Ал розалар, баҙыян гөл, сәскәләр — бары ла минең, барын биләйем.* Ғ. Амантай./*күсм.* Кешенең уй, күңелен үҙенә йәлеп итеү. *Күңелде биләү.* ■ *Ҡай саҡ тормошонда булып үткән ваҡиғалар биләй уйынды.* Ғ. Сәләм.

**2.** Күпмелер майҙанды үҙ эсенә алыу. *Быуа 109 гектар майҙанды биләй.* «Совет Башҡортостаны», 1969, 18 сентябрь./Күпмелер урынды солғап алыу. *Улар айырым өҫтәл биләп ултырҙы.* Д. Исламов.

**БИЛӘҮ** [2] *к.* Йәш баланы йүргәккә урап бәйләү. *Тыуған ҡыҙ баланы ҡулына алып, Муйылбикә үҙе кендек инәһе булды. Мәғфүрә менән икәүләп уны йыуындырып, эсәһенең күлдәк аламаһына биләп һалдылар.* Һ. Дәүләтшина.

♦ **Ҡул биләү** *ҡар.* **ҡул** [1].

**БИЛӘҮ** [3] *и.* **1.** Йәш баланы ураған йүргәк менән биләүес. *Биләүҙәге бала.* ■ *Ата менән әсә исем эҙләй, бала илай биләүен типкеләп.* М. Тажи.

**2.** *диал.* Биләүес.

● *Булыр бала биләүҙән.* Мәҡәл.

**БИЛӘҮЕС** *и.* Йәш баланы, аяҡ-ҡулын йыйып, йүргәк тышынан бәйләй торған оҙон сепрәк.

**БИЛӘҮСЕ** *и.* Кемгә йәки нимәгәлер эйә булған кеше. *Ер биләүсе.*

**БИЛӘҮСӘ** *и. диал.* Биләүес.

**БИМАЗА** [*фарс.* 〈*ғәр.*] *и.* Тынғыһыҙлаған, ҡамасаулаған нәмә; мәшәҡәт, ҡамасау. *Бимаза яһау.* ■ *Өйҙә бимазаһын бөтөргәс тә халыҡ салғы, ураҡ ҡулға алды.* Ғ. Амантай.

**БИМАЗАЛАУ** *к.* Тынғы бирмәй ҡамасаулау; бимаза яһау; мәшәҡәтләү, борсоу.— *Күрше, миңә һөймән кәрәк ине.— Йөрөйһөң бимазалап! Иртәгә килһәң, булмаймы?* Х. Мохтар.

**БИНА** [*ғәр.*] *и.* Ниндәйҙер йәмғәт ойошмаһы һ. б. урынлашҡан ҙур йорт, архитектура ҡоролмаһы. *Больница бинаһы. Китапхана бинаһы. Мәктәп бинаһы. Клуб бинаһы.*

♦ **Бина ҡылыу** ҡороу, төҙөү. *Башҡорт ерҙәренә ҡалалар бина ҡылына башланы.* М. Һаҙыев.

**БИНАХАҠ** [*фарс.* 〈*ғәр.*] *и.* Ғәйепһеҙ. *Бинахаҡтан әрләү.* ■ —*Бинахаҡҡа рәнйеткән өсөн үҙҙәре бер көн хур булһын!* М. Ғафури.

**БИНАӘН** [*ғәр.*] *р. иҫк.* Нигеҙендә, нигеҙләнеп, ярашлы рәүештә. *[Сәхипгәрәй — Кәлигә:] Большевиктар әйтмешләй, хәл-ваҡиғаларға бинаән тактиканы үҙгәртергә белергә кәрәк.* И. Ғиззәтуллин.

**БИНЕ** [*ғәр.*] *и. иҫк. кит.* Кемдеңдер улы мәғәнәһендә кеше исеменә ҡушыла; ибне.

**БИНЗӘҮ** [*төрк.*] *к. иҫк. кит.* Оҡшаш булыу, оҡшау. *[Ендәр — Иблискә:] Төҫкә, биткә беҙгә байтаҡ бинҙәйһең, әллә юкһа, юл аҙашкан енмеһең?* Ш. Бабич.

**БИНИҺАЯ** [*фарс.* 〈*ғәр.*] *р.* Бик күп, иҫәпһеҙ, хисапһыҙ. *[Байгилдин:] «Оло юлда» ер, бесәнлек — биниһая, ә тимер-томор юк.* Х. Ғиләжев.

**БИНОКЛЬ** [*рус.* 〈 *фр.*] *и.* Алыҫтағын яҡынайтып күрһәтә торған ике параллель торбалы оптик прибор. *Театр бинокле. Хәрби бинокль. Биноклдән ҡарау.*

**БИНОМ** [*рус.* 〈*лат.* + *гр.*] *и. мат.* Ике бербыуындың суммаһы йәки айырмаһы булып торған алгебраик аңлатма.

**БИНТ** [*рус.* ⟨*нем.*] *и.* Ауыртҡан, яраланған ергә бәйләй торған марля; бәй. *Нарынбай сумкаһынан бинт алып, уң беләгендәге яраһын бәйләне.* Ш. Насыров.

**БИНТЛАУ** *к.* Бинт менән бәйләү. *Яраны бинтлау.*

**БИО́ГРАФ** [*рус.*] *и.* Кемдеңдер биографияһын төҙөүсе.

**БИОГРАФИК** *с.* Биографияға мөнәсәбәтле. *Биографик әҫәр.* ■ *Ысынлап та ул бәйеттәр биографик нигеҙҙә, алынған геройҙың боевой подвигтары тормошта нисек булһа, шул рәүешле һөйләп биреү нигеҙендә, тыуалар.* К. Мәргән.

**БИОГРА́ФИЯ** [*рус.* ⟨*гр.*] *и.* Кемдеңдер тормош юлын һүрәтләгән яҙма. *В. И. Лениндың биографияһы. Яҙыусының биографияһы.*/Кемдеңдер тормош юлы. *Биографияны һөйләү.*

**БИО́ЛОГ** [*рус.*] *и.* Биология буйынса белгес.

**БИОЛОГИК** *с.* Биологияға мөнәсәбәтле. *Биологик закон. Биологик күренеш. Биологик үҙенсәлек.*

**БИОЛО́ГИЯ** [*рус.* ⟨*гр.*] *и.* Тере тәбиғәтте, органик донъяны өйрәнә торған фән.

**БИО́НИКА** [*рус.* ⟨*гр.*] *и.* Биология менән техника араһында сиктәш булып, организмдарҙың төҙөлөшөн һәм йәшәү эшмәкәрлеген анализлау нигеҙендә инженер бурысын хәл итә торған фән.

**БИОСФЕ́РА** [*рус.* ⟨*гр.*] *и.* Ер шарының төп үҙенсәлектәре тереклектәрҙең үткәндәге йәки хәҙерге эшмәкәрлеге менән сикләнгән ҡатламы.

**БИОТЕХНОЛО́ГИЯ** [*рус.*] *и.* Биологик процестарҙың һәм системаларҙың файҙалы продукт етештереү өсөн файҙаланыуы.

**БИОТО́К** [*рус.*] *и.* Кешенең һәм юғары төҙөлөшлө хайуандарҙың мейеһендә барлыҡҡа килә торған электр магниттары тирбәлештәре.

**БИОФИ́ЗИК** [*рус.*] *и.* Биофизика буйынса белгес.

**БИОФИЗИ́К** *с.* Биофизикаға мөнәсәбәтле. *Биофизик процестар. Биофизик тәжрибә.*

**БИОФИ́ЗИКА** [*рус.*] *и.* Биологияның тере организмдарҙағы физик һәм химик закондарҙы өйрәнә торған бүлеге.

**БИОХИ́МИК** [*рус.*] *и.* Биохимия буйынса белгес.

**БИОХИМИ́К** *с.* Биохимияға мөнәсәбәтле. *Биохимик анализ.*

**БИОХИ́МИЯ** [*рус.*] *и.* Тере материяға хас булған химик процестарҙы өйрәнә торған фән.

**БИОЭНЕРГЕ́ТИКА** [*рус.*] *и.* Молекуляр биологияла, биофизикала организмдың йәшәү эшмәкәрлеге барышындағы энергияны икенсегә әүерелдереү механизмдарын өйрәнә торған тармаҡ.

**БИП** *окш.* Өҙөк кенә нәҙек тауышты белдергән һүҙ. *Машина бип итеп ҡыҫҡыртып ебәрҙе.*

**БИП-БИП, бип тә бип** *окш.* Ҡабат-ҡабат бип иткәнде белдергән һүҙ. *Бип-бип итеү. Бип тә бип килеү.* ■ *Ҡаҙ бәпкәһе бип-бип итеп бейек үлән араһынан килеп сыҡты.*

**БИПЕЙ** *и. диал. кар.* **бәпкә** [1].

**БИПЕЛДӘҮ** *к.* Бип-бип итеү, бип тә бип килеү. *Бипелдеге сығыу.*

**БИПЕЛДӘШЕҮ** *к.* Бип-бип итеп ҡыҫҡырышыу. *Үләндә бәпкәләр йөрөй, үҙ-ара бипелдәшеп.* К. Бакиров.

**БИР** *и. диал. кар.* **биртек** [1]. *Бире уңалған ағас.*

**БИРАН-ТАРАН: биран-таран итеү** *диал.* пыран-заран итеү (*кар.* **пыран-заран**).

**БИРГЕ** *с.* **1.** Сағыштырмаса яҡыныраҡтағы, был табандағы; *киреһе* арғы. *Бирге тау. Бирге яҡ.* ■ *Ватандың арғы сигенән йәйәүләп сыҡһаң әгәр, йыл йөрөрһөң, етә алмаҫһың бирге сигенә хәҙер.* Р. Ниғмәти.

**2.** Ниҙеңдер былай табанындағы. *Арғы яҡтан бирге яҡҡа ҡамыштан баҫма һалдым* [Халыҡ йырынан).

**БИРҘЕРЕҮ** *к. йөкм. кар.* **биреү.**

**БИРЕ** [1] *р.* **1.** Был яҡҡа яҡыныраҡ, былай табан; *киреһе* ары. *[Урманцева:] Аҡыллым, кил әле бире!* С. Агиш.

**2.** *и. мәғ.* Был табандағы урын. *[Ғәлиә:] Әйҙүк, Булат, бына беренән ултырып кит.* К. Кинйәбулатова.

**БИРЕ** [2] *бәйл.* Сығанаҡ килештән йәки эйәлек ялғаулы *-ған* формаһынан һуң килеп, эш-хәрәкәт, хәл-ваҡиғаның башланғыс мәленән килгән дауамын белдерә. *Киткәне бире. Күптән бире. Шунан бире. Кисәнән бире. Баянан бире.*

**БИРЕ** [3] *и. диал.* Бәрей.

**БИРЕГЕҮ** (бирек*е*) *к.* Көс, тәьҫиргә бирешмәҫлек булыу; нығыу. *Күп яуҙарҙа биреккән ил талыҡмай буламы* (Ҡобайырҙан).

**БИРЕГӘ** *р.* Ошо урынға, ошо ергә; бында. *Бирегә килеп ултырыу. Нәмәне бирегә ҡуйыу.*

**БИРЕК** *с.* Ныҡлы, ныҡ. *Бирек ат.*

● *Бирек бил биртенмәҫ.* Әйтем.

**БИРЕЛГӘНЛЕК** *и.* **1.** *кар.* **тоғролоҡ.**

**2.** *кар.* **ихласлыҡ.**

**БИРЕЛЕ** *с. диал.* Енле, ҡыҙмалы.

**БИРЕЛЕҮ** *к.* **1.** *төш. кар.* **биреү** 1—7, 10—12, 14—17.

**2.** Ҡаршылыҡ күрһәтеүҙе туҡтатыу. *Бер аҙ уйнағандан һуң өс шахматсы ысынлап та бирелергә мәжбүр булды.* З. Хисмәтуллин.

**3.** Үҙләштереүгә, аңлауға һ.б. еңел, анһат булыу; аңлашылыу. *[Ильяс:] Миңә был фән бик ауыр бирелә.* Ҡ. Даян.

**4.** Ҙур ҡыҙыҡһыныу менән, ихлас күңелдән керешеү, бик ныҡ мауығыу. *Бирелеп эшләү. Һүҙгә бирелеү.* ■ *Хисмәтулла ла әкренләп эскегә бирелде.* Я. Хамматов.

**5.** Ниҙеңдер шауҡымына эйәреү. *Ҡотҡоға бирелеү.* ■ *Ҙур гәйеп Сәйҙелдең үҙендә: комсомолец үҙе, үткенсенең һүҙенә бирелгән.* Ғ. Сәләм. /Ниҙеңдер тәьҫиренә әсир булыу. *Моңға бирелеү. Өмөтһөҙлөккә бирелеү. Тойғоға бирелеү. Уйға бирелеү. Хыялға бирелеү.*

**БИРЕЛӘНЕҮ** *к.* Туҙып, ҡыҙып китеү; енләнеү. *Юҡҡа ғына биреләнеп барыу.*

**БИРЕМ** *и.* **1.** Бирер нәмә.

**2.** *диал. кар.* **бирнә** 1.

● *Муллала бирем, ярлыла керем булмаҫ.* Әйтем.

**БИРЕНЕҮ** *к.* Ришүәт биреү.

**БИРЕС** *и.* Ағастағы сурайып сыҡҡан оро. // *Бирес һауыт.*

**БИРЕҮ** *к.* **1.** Ҡулдан ҡулға тапшырыу, ҡул менән һонол тотторoу. *Икмәк биреү. Китап биреү. Юлға аҡса биреү.* ■ *Өйҙән сығыр алда хужа ҡатын минең ҡулға сепрәккә төрөлгән бер нәмә бирҙе. Ул икмәк ине.* Д. Юлтый. *— Мә! Сәтләүек яра тор,— тип кеҫәһән усты тултырып алып, сәтләүек бирҙем тегеңә. Зөләйхә йылмайып ҡына сәтләүекте алды ла „рәхмәт" тигә булды.* Т. Йәнәби. / Килтереп алға ҡуйыу, һыyыу. *Аҫылбикә .. бесән йомарлап, Турысайҙың һырт буйҙарын һыпырҙы ла, утлыҡҡа индереп бесән бирҙе.* Т. Хәйбуллин. *— Әйҙә, йәһәт бул, ҡоҙаларға һурпа бирә һалырға кәрәк! — тине [Әхмәҙи].* Һ. Дәүләтшина. / Берәйһенең ҡарамағына, файҙаланыуына тапшырыу. *Ғәскәри кейем биреү. Ярҙамсы биреү.* ■ *Квартира хужаһы фанер таҡта менән бүленгән бер бүлмә, шығырлап торған ағас карауат бирҙе.* С. Агиш. *Ерһеҙ ҡалған башҡортҡа ерен бирәм, тигән ул [Пугачёв]; һыуһыҙ ҡалған башҡортҡа һыуын бирәм, тигән ул.* Салауат Юлаев. / Мәғлүм итеү, хәбәр итеү. *Адресты биреү. Телефон номерын биреү.* / Тәҡдим итеү (урын, юл һ.б. нәмәне). *— Гражданка, .. ситкәрәк китеп тороуығыҙҙы һорайым, башҡаларға юл бирегеҙ!* М. Тажи. *Беҙҙе .. Урманцева ҡаршы алды. Миңә урындыҡ бирҙе.* С. Агиш.

**2.** *һөйл.* Күпмелер хаҡ түләү. *Новиков күтәрелеп, крәҫтиәндең һүҙен көтмәйенсә: — Ни хаҡ алаһың. Күпме бирәйек,— тип көршәкте һәм икмәкте ҡулынан тартып алды.* Д. Юлтый. *— Бына йөҙ һум биреп алған ошо көҙгөнән башҡа бер әйбер ҙә тапманым,— тип, теге егет кеҫәһенән бер көҙгө сығарып күрһәтте, ти* (Әкиәттән). / *һөйл.* Күпмелер хаҡ менән һатыу. *Кооператив .. Аҡназарҙың алам тигән нәмәләрен арзан хаҡ менән бирҙе.* Ғ. Дәүләтшин.

**3.** Ҡайһы бер абстракт мәғәнәле исемдәр менән килеп, шул исемдән аңлашылған төшөнсәгә эйә итеүҙе белдерә. *Махсус белем биреү. Уҡырға мөмкинлек биреү. Хоҡуҡ биреү.* ■ *— Баланы дөрөҫ юлға төшөрөү, уға дөрөҫ йүнәлеш биреү — әнә менән ҡойо ҡаҙыу ул.* М. Тажи. *— Алла инде һиңә бәхетте күрәп-күрәп итәк тултырып биргән.* Т. Хәйбуллин. *Хоҙай бирер йәннәттең тугайы һылыу Урал тау* (Ҡобайырҙан).

**4.** Исемдәр менән килеп шул исемдән аңлашылған үҙенсәлеккә, сифатҡа эйә итеү. *Дәрт биреү. Илһам биреү. Ләззәт бирәү. Рух биреү. Рәхәтлек биреү. Сабырлыҡ биреү. Таяныс биреү.* ■ *Индрилдең һүҙе беҙгә тәрән тәьҫир бирмәне.* Д. Юлтый. *Бала бит ул — эшкә көс бирә, тормош йәме күберәк күренә.* Ғ. Сәләм. / Ниҙелер бүләк, награда һ.б. итеп тапшырыу. *Бүләк биреү. Орден биреү. Халыҡ артисы исеме биреү.* ■ *— Ҡустым, һөйөнсө, ни бирәһең? — тине ул [Ғариф], нимәлер тотҡан һыңар ҡулын артына йәшереп.* Б. Бикбай. / Башҡарыу, үтәү өсөн ниҙер билдәләү, тәғәйенләү. *Ауыр эш биреү. План биреү.* ■ *Күпер эшләргә, окоп ҡаҙырға йөрөгән ваҡытта .. икенсе бер наряд бирәләр. Хәҙер бер аҙна инде, беҙ күпер материалдарын ҡарауыллайбыҙ.* Д. Юлтый. / *һөйл.* Кемдеңдер йәшен билдәләү. *Ҡаҡса, еңел кәүҙәһенә, йәштәрсә баҙыҡ, тигеҙ тештеренә ҡараһаң, уға [Хасбулат олатайға] хатта алты тиҫтәне лә биреүе ҡыйын.* З. Биишева.

**5.** *юкл. ф.* Билдәле бер абстракт исемдәр менән килеп, шул исемдән аңлашылған төшөнсәнең булыуына ҡамасау иткәндә белдерә. *Һөйләшергә ирек бирмәү.* ■ *Мин Ғәбдрәфиҡ бабайға тынғы бирмәнем, һәр ваҡыт һораша торҙом.* Ғ. Ғүмәр. *[Ғәлләм:] Туҡта әле әсәһе! Мин һиңә малай түгел. Тын-тәҡәт бирмәй, ниңә әле былай дөрөп алып бараһың?* С. Кулибай.

**6.** Ғәҙәттә төбәү килешендәге исемдәр менән килеп көс менән ныҡ итеп һуҡҡанды белдерә. *Елкәгә биреү. Атҡа ҡамсы менән биреү. Сикәгә биреү. Яңаҡҡа биреү.* ■ *Мәргүп .. тәртешкә менән Ҡәмәр ҡорҡаға бирергә тотонодо.* Т. Йәнәби. *[Юлай — Сәхигә:] Ныҡлыраҡ бир. Йоҙроғоңдо йәлләмә. Онотоорлоҡ булмаһын.* И. Ғиззәтуллин.

**7.** Халыҡ алдында концерт, спектакль һ.б. менән сығыш яһау. *Концерт биреү.* ■ *Был түңәрәк мәктәп сәхнәһендә генә түгел, ҡала театры бинаһында ла спектаклдәр бирә.* С. Агиш.

**8.** Ғәмәлдә бар итеү, етештереү, булдырыу (уңыш, емеш һ. б. ҡарата). *Күп доход биреү. Яҡшы уңыш биреү.* ■ *Киң Уралда ҡара урмандар шаулап ултыра. Унда йүкә тәмле балын бирә, һынын бирә һылыу шыршылар.* Р. Ниғмәти.

**9.** Берәй эш-хәлдең һ. б. һөҙөмтәһе итәрәк күрһәтеү, белдереү. *Ҡолморҙа ... мылтығын алды ла Сураголға тоҫҡап сағылдырҙы, ләкин мылтыҡ ут бирмәне.* Т. Хәйбуллин.

**10.** Исемдәр менән килеп шул исем төшөнсәһендәге эште башҡарыуҙы белдергән һүҙ бәйләнеше яһай. *Аңлатма биреү. Баһа биреү. Бойороҡ биреү. Заказ биреү. Команда биреү. Күрһәтмә биреү. Наказ биреү. Приказ биреү. Ризалыҡ биреү.* / Ҡайһы бер исемдәр менән килеп, ниҙер башҡарыуҙы белдерә. *Залп биреү. Звонок биреү. Сигнал биреү.* ■ *Пароход һуҙып-һуҙып гудок бирҙе. Уның тауышы кешеләрҙең йөрәгенә ут һалғандай бәреп керҙе.* М. Тажи. *Ул [Аҙнабай] тракторын тырылдатып, газ бирҙе.* Ф. Әсәнов.

**11.** Телдән әйтеп еткереү. *Аҡыл биреү. Кәңәш биреү.* ■ *Мулла .. вәғәз, нәсихәт бирҙе: — Бына, ил аҙаматтары, беҙ әүәл аллаға, шунан батшаға буйһонғанбыҙ.* Һ. Дәүләтшина. / Телдән әйтеп белдереү. *Ант биреү. Вәғәҙә биреү.* ■ *Йәш сағым, алтын сағым, ялҡын сағым булһын фиҙа халҡым алдында минең биргән таҙа антым өсөн.* Ш. Бабич.

**12.** Эшкә, хеҙмәткә һ. б. тапшырыу. *Уҡырға биреү. Һалдатҡа биреү.* ■ *Ғәйни ағай ҙа ике улын байға биреп булһа ла, ике дисәтинәнән артығыраҡ ашлыҡ сәсеп ҡалдырҙы.* Т. Йәнәби. / Кейәүгә сығарыу. *Ҡыҙ биреү.* ■ *Атаҡайым мине йәшләй бирҙе, көтөр мәлкәйҙәре юҡмы икән?* Сеңләүҙән.

**13.** Тотоп, кемдеңдер ҡулына тапшырыу. *[Бәгиҙә:] Ҡыуғынсылар башлығы Сәлмән .. утар хужаһын ҡурҡытып ҡараны, ләкин ул беҙҙе бирмәне. «Белмәнем дә күрмәнем» тип тик торҙо.* И. Ғиззәтуллин.

**14.** Ҡаршы тора алмай, еңелеп, дошманға ҡал-

дырыу. *Тиҙ көндән Варшава калаһын да бирерүебеҙ ихтимал тиҙәр. Сөнки фронт бик якын.* Д. Юлтый. — *Бирмәйем,— тип,— Уралды,— яуға киткән егетем, тыңла Урал ни тиер.* Р. Нигмәти. / Ҡулдан ысҡындырыу. *Өҫтөнлөктө биреү.* ■ *Йөҙөү ярышында беренселекте һис бирмәйбеҙ.* Ғ. Сәләм. / Ҡайҙалыр берәй маҡсат менән тапшырыу. *Ботинканы ремонтка биреү. Пальтоны таҙартырга биреү.* ■ *Яулыҡ бирҙем сигергә кара кашлы сибәргә* (Халыҡ йырынан).

**15.** *күсм.* Кемгә йәки нимәгәләр арнау; бағышлау. *Донъяға нурҙарын биргән Кремле бар Мәскәүҙең.* Р. Нигмәти. *Их алда ла йөрәк һүҙҙәремде бирәһе ине илгә, бирәһе.* Ғ. Ғүмәр.

**16.** *күсм.* Кем йәки нимә өсөндер ҡорбан итеү.— *Ватанды яҡларбыҙ, кәрәк икән гүмеребеҙҙе бирергә лә әҙербеҙ.* М. Тажи.

**17.** Яҙма рәүештә йәки телдән ниҙер тапшырыу. *Ғариза биреү. Отчёт биреү. Рапорт биреү. Ялыу биреү.* ■ *25 июнгә дивизияла имтихан бирмәгән бер генә һугышсы ла калманы.* Ә. Ихсан. *Вузда уҡый хәҙер Зәйнәбем. Ул зачет бирергә әҙерлән[ә].* Ғ. Сәләм.

**18.** Билдәле бер хәлгә килтереү. *Гармунсы гармунының ҡыңгырауын зыңгырлатып алды ла уга көй бирҙе.* М. Тажи. / Ниндәйҙер сифатҡа, үҙенсәлеккә килтереү. *Ашка әсе тәм биреү. Кейемгә яңы төҫ биреү. Өйгә йәм биреү. Төҫкә күркәмлек биреү. Һынга олпатлыҡ биреү.* ■ *Кейәүгә сыгыу Мәхмүзәгә төҫ биргәндер ахыры, матурланыбырак .. киткән кеүек күренә.* Д. Исламов. / *күсм.* Уйҙы, күңелде, һалыу. *Игтибар биреү. Күңел биреү.* ■ *Бер күреүҙән уның [дуҫ тыуган төйәктең] һәр төпкөлөн бар хисеңде биреп һөйәһең.* М. Уразаев.

**19.** *≠п* формаһындағы хәл ҡылым менән килеп, ярҙамлыҡ ҡылым сифатында эш-хәрәкәттең кемгәләр төбәлеүен, тәғәйенләнеүен белдергән ҡушма ҡылым яһай. *Алып биреү. Аңлатып биреү. Өйрәтеп биреү. Уҡып биреү. Һөйләп биреү. Әйтеп биреү.* ■ *Индриль .. беҙгә аш бешереп бирә лә, кармаҡтарын тотоп, Висла буйына балыҡ тоторга китә.* Д. Юлтый. *[Тулыбай] ондо Вәлимә еңгәйгә килтереп бирҙе. Үҙе йокларга ятты.* Ғ. Дәүләтшин.

**20.** *≠а/≠й* формаһындағы хәл ҡылым менән килеп, ярҙамлыҡ ҡылым сифатында эш-хәрәкәттең йәне бер аҙ дауам итеүен белдергән ҡушма ҡылым яһай. *Ала биреү. Ашай биреү. Тора биреү. Уйнай биреү. Ултыра биреү. Эшләй биреү.* ■ *Зәлхизә .. Аҙнаголон көтөп, диңгеҙҙән күҙен алмай, моңайып йырлап йөрөй бирә.* З. Биишева. *„Аккош“, башын һелккеләп килә бирҙе лә һөрөнөп, колап китте.* М. Тажи.

● *Биргәндең битенә карама.* Мәкәл. *Илмагаган балага имсәк бирмәйҙәр.* Мәкәл.

**БИРЕШЕҮ**[1] *к. урт. кар.* **биреү** 1—5, 10, 11. *Ҡул бирешеү. Тауыш бирешеү.*

**БИРЕШЕҮ**[2] *к.* **1.** Берәй эштә, алышта, һүҙҙә ҡаршы тора алмай еңелеү.— *Бирешә торган малаймы ни Йәнтимер, оҫта яуап бирә.* С. Агиш.— *Йокас олатай! Ни эшләп һин бөгөн былайтып таң йокоһона бирешеп тораһың әле? Борон, йәш саҡтарҙа, былай булмаганһыңдыр бит?* Ғ. Дәүләтшин. *Салауаттай батыр, данлы ирҙәр баҫып килгән яуга бирешмәй* (Халыҡ йырынан). / Кем йәки ни менәндер сағыштырғанда тиңләшә алмау, кемгә йәки нимәгәләр ҡарағанда әҙерәк лайыҡлы, күп ҡайтыш булыу. *Шамил өс йыл гына элек ФЗУ-нан килгән. ..Ләкин карттарга бирешмәй.* Х. Мохтар.

**2.** Сыҙай алмай, ҡаҡшау. *Ҡайгыга бирешеү. Эшкә бирешеү. Королокка бирешеү. Һыуыкка бирешеү.* ■ *Биреште Шамун карт һуңгы йылдарҙа, нык биреште. Ә бит бар ине уның да шәп саҡтары.* Д. Исламов. *[Ҡаһымбай:] Яңы машина .. Нишләтһәң дә бирешерлек түгел.* И. Ғиззәтуллин.

**БИРЖА** [*рус.* ‹*нем.*] *и.* Капиталистик илдәрҙә: эре сауҙа һәм финанс эштәре буйынса бәйләнеш ҡороу учреждениеһы.

♦ **Хеҙмәт биржаһы** эш көсөн яллағанда эшсе менән предприниматель араһында аралашсылыҡ иткән учреждение.

**БИРЖЕВИК** [*рус.*] *и.* Капиталистик илдәрҙә: биржа эше менән шөғөлләнгән кеше.

**БИРКА** [*рус.*] *и.* Номер йәки төрлө мәғлүмәт яҙылған бәләкәй генә таҡта (багажға, тауарға һ. б. нәмәгә тағыла).

**БИРЛЕ** *бәйл. кар.* **бире**[2].

**БИРЛЕГЕҮ** (бирлек≠) *к. диал.* Киңгәү.

**БИРЛӘНЕҮ** *к. кар.* **биреләнеү**.

**БИРМАН** *и.* Бирманың төп халкын тәшкил иткән милләт һәм шул милләттең бер кешеһе (ҡытай-тибет телдәренең береһендә һейләшә). *Бирман халкы. Бирман ҡатыны. Бирман теле.*

**БИРМӘ** *и.* Вазифалы кешегә аҫтыртын бер эште яйлау өсөн бирелгән аҡса йәки нәмә; ришүәт. *Бирмә биреү.*

**БИРНӘ** *и.* **1.** Ҡыҙ яғынан егеттең ата-әсәһенә бирелгән бүләк. *Бирнәһенә карап ҡыҙҙың оҫталыгы, уңганлыгы тураһында хөкөм йөрөткәндәр.* «Совет Башҡортостаны», 1968, 24 ғинуар. / Кейәүҙең ҡайны-ҡәйнәһенә күренер алдынан биргән бүләге.

**2.** Ҡыҙҙың артынан килгән мал-мөлкәт. *[Хәсби:] Бирнәмә генә килгән самауырымды ҡомлап ҡат-ҡат таҙарта торгас, һемәгән төшөрҙөм.* Б. Бикбай.

**БИРСӘ** *и.* Яранан йәки һынғандан һуң төҙәлгән урында барлыҡҡа килгән эҙ. *[Ғарифтың] ауыҙ ситенән һул колагының төбөнә тиклем бирсә һуҙылган. Ул .. казаҡ офицерының ҡылыс менән сапкан эҙе.* Х. Мохтар.

**БИРСӘЙЕҮ** *к.* Йөйле булыу; йөйләнеү. *Бирсәйеп уңалыу. Яраның урыны бирсәйеп тора.*

**БИРСӘЛӘНЕҮ** *к. кар.* **бирсәйеү**.

**БИРСӘТКӘ** [*рус.* перчатка] *и.* Биш бармаҡлы ҡул кейеме. *Дебет бирсәткә. Йөн бирсәткә. Күн бирсәткә. Бирсәткә бәйләү.*

**БИРТ** *и.* Яртылаш һынған урын. *[Урал батыр] балтыр ите һулыған, бирте уңалган агастай, елек башы сурайган бер карсыкка һырышкан.* «Урал батыр».

**БИРТЕК**[1] *и.* Биртенгән урын.

**БИРТЕК**[2] *и.* Биле биртенгән кешене имләр өсөн ҡырҡ өйҙән йөрөп йыйған ашамлыҡ. *Биртек ашы. Биртек йыйыу.* ■ *Сәмигулланың ун*

*ике йәшлек ҡыҙы Мәстүрә .. өй беренсә инеп, туҫтағын ишектән һоноп, һамаҡлап, бирт<br>ек һорап йөрөнө.* Ж. Кейекбаев.

**БИРТЕЛЕҮ** *ҡ. төш. ҡар.* **биртеү.**

● *Биртенгәнгә биртелмә.* Әйтем.

**БИРТЕНДЕРЕҮ** *ҡ.* Ауырлыҡ төшөрөп, һуғып, шаҡарып имгәтеү. *Билде биртендереү.* ■ *Туры айғыр сананы ҡәйелтеп йығып, Нәгимдең ҡулын биртендерҙе.* Һ. Дәүләтшина.

**БИРТЕНЕҮ** *ҡ.* Ауырлыҡ төшөп, һуғылып, шаҡарылып имгәнеү. *Биле биртенеп, ҡуҙғала алмай ятҡан Юламан ҡарттың күңеленә хафалы уйҙар килә.* З. Биишева.

**БИРТЕҮ** *ҡ. иҫк.* Биртендереү.

● *Бейә колонон типһә лә биртә типмәҫ.* Әйтем.

**БИРЬЯҠ** *и.* Һыу, соҡор, үҙәк һ. б. ерҙең бирге яғы; *киреһе* аръяҡ. *Бирьяҡта ҡалыу. // Бирьяҡ урам. Бирьяҡ яр.* ■ *Кисеүҙән бик күп һыбайлы бирьяҡҡа сыға. Аталар.* И. Көҫәпҡол.

**БИРӘН** *и.* **1.** *мед.* Тире аҫтына һары һыу йыйылып яман шешендерә торған ауырыу.

**2.** *күсм.* Туймай күп ашаған кеше; мәскәй. *Бирән булыу.* / Байлыҡҡа туймаған кеше; ҡомһоҙ. *Ә беҙ хәҙер тотош колхозлашып, бөтөрәбеҙ бирән кулаҡты.* С. Ҡудаш. **Ғәйеп бирән** байлыҡҡа туймаған ас күҙ.

● *Бүр байыҡмаҫ, бирән туймаҫ.* Әйтем.

**БИРӘНЛӘНЕҮ** *ҡ.* Туймаҫ тамаҡҡа, бирәнгә әйләнеү.

**БИРӘСӘК** *и.* Бурысҡа алынып, кире бирелергә тейешле булған аҡса йәки бүтән нәмә. *Бирәсәктә алыу. Бирәсәкте биреү. // Бирәсәк аҡса.*

● *Байҙың аласағы, ярлының бирәсәге күп.* Әйтем.

**БИС** [*рус.* ⟨ *лат.*] *ымл.* Артист эле генә башҡарған номерҙы ҡабат һорап саҡырыуҙы белдерә. *Бис ҡысҡырыу.*

**БИСАРА** [*фарс.*] *с.* Ҡыйын, ҡыҙғаныс хәлдәге; бахыр. *Бисара һалдатҡа тубын да үҙенә һөйрәргә, икмәген дә үҙенә күтәрергә тура килә.* Д. Исламов. / Йәлләгәндә әйтелә. *Тик бер кәкүк кенә юл ситендә емдәр эҙләп йөрөй, бисараң.* М. Кәрим.

**БИСЕР** [*рус.* писарь] *и. һөйл.* Писарь.

**БИСКВИТ** [*рус.* ⟨ *фр.*] *и.* Йомортка, һөт-май, шәкәр ҡушып бешергән йомшаҡ, татлы икмәк. *Бисквит пирожныйы. Бисквит торты.*

**БИСМИЛЛА** [*ғәр.*] *и.* **1.** Мосолмандарҙың эш башлар алдынан әйтелә торған һүҙе. *[Үмәр] бисмилла тип икмәк һындырҙы ла, балғалаҡ менән май һоғона-һоғона сәй эсергә кереште.* Һ. Дәүләтшина.

**2.** *күсм.* Эш-хәрәкәттең, хәл-ваҡиғаның башы. *[Юлтыев — Кусимовка:] Эшеңдең бисмилләһы колхозда партия ойошмаһы төҙөү булырға тейеш.* Ғ. Әмири.

**БИССЕКТРИСА** [*рус.* ⟨ *фр.*] *и. мат.* Мөйөштө ҡап урталай бүлгән һыҙыҡ. *Биссектриса үткәрәү.*

**БИСУРА** *и.* Ялбыр һары сәсле ҡурҡыныс ҡатын-ҡыҙ һүрәтендәге мифик зат. — *Зәйнетдингә бисура әйәләшкән, имеш. Бисураһы ҡараңғы төшкәс кенә, баҙҙан сығып, сибәр ҡатын һүрәтенә инә имеш. Зәйнетдин уны һағынып, ҡараңғы төшкәнен көтөп ала алмай күҙе тона имеш.* Ф. Иҫәнғолов.

**БИСӘ** *и.* **1.** Ирҙең ғаиләиптәше; ҡатын, йәмәғәт. *Бисә алыу. Бисәләр эше.* ■ *Теге ҡыҙ, мине бында ел ташланы, тигән. Тимербулат уға ғашиҡ булып та өлгөргән. Оҙаҡ уйлап тормай бисә итеп алып, бергә тора ла башлаған* (Әкиәттән).

**2.** Иргә барған, ире булған ҡатын-ҡыҙ; ҡатын. *Бисә кеше.* ■ *Бына шунда аулаҡ бер өй табып йыйылғандар ҡыҙҙар, бисәләр.* Т. Йәнәби.

**БИСӘКӘЙ** *и.* **1.** *ирк. ҡар.* **бисә** 1. *Юламан ҡарттың да сағыу ҡарашлы бисәкәйе бар ине!* З. Биишева. / *һөйл.* Таныш булмаған бисәгә ҡарата әйтелә. *Бер бисәкәй килә.*

**2.** *мыҫҡ.* Бисәләр эшенә ҡыҫылған ирҙәргә әйтелә.

**БИСӘ-СӘСӘ** *и. йыйн.* Бисәләр. *Бөтәһе лә һуғышта .. тик ҡарт-ҡоро, бала-саға, бисә-сәсә генә ҡалған.* Д. Юлтый.

**БИҪТӘ** [1] *и.* Ҡала ситe. *Өфөнөң айырым биҫтәләре.. Ағиҙелдең уйпат һул яҡ ярын биләйҙәр.* М. Хисмәтов.

**БИҪТӘ** [2]**: тел биҫтәһе** телгә бөткән, күп һөйләгән кеше. *Ғөмүмән, Азамат тел биҫтәһе түгел. Ул сер һаҡлай торған малай.* Ә. Бикчәнтәев.

**БИТ** [1] *и.* **1.** Кеше башының алғы яғы; йөҙ. *Киң бит. Оҙонса бит. Түңәрәк бит. Бит осо.* ■ *Сәғиҙә усы менән битен ҡаплап илап тора ине.* М. Тажи. *„Тфу, оятһыҙ!" — тип [Мәғүзә] .. Фатиманың битенә төкөрҙө.* Б. Бикбай. **Табаҡ бит** киң түңәрәк бит.

**2.** Йөҙҙөң яңаҡ өлөшө, яңаҡ. *Нина матур, ягымлы ҡыҙ.. Уның бит остары ҡып-ҡыҙыл булып янып тора.* Д. Юлтый. *Пар алма уның биттәре, ирендәре ер еләге, күҙҙәре — яҡты йондоҙҙар, леп-леп тибә йөрәге.* Р. Ниғмәти. **Бит алмаһы** биттең тупайып торған өлөшө.

**3.** Тау, ҡалҡыулыҡтың һ. б. һарҡыу өлөшө. *Биттәрендә, Урал тау, ҡамыштай ҡарағай урманың; итәгеңдә, Урал тау, балаҫтай болон, ҡырҙарың.* Салауат Юлаев.

**4.** Ниҙеңдер йәйелеп күренеп ятҡан майҙаны; йөҙ. *Ер бите. Күл бите. Ҡар бите.* ■ *Эре һорғолт ҡара болоттар бер-береһенә ҡушылып күк битен ҡаплап алды.* М. Ғафури.

◆ **Бармаҡ бите** бармаҡтың йомро булып, ҡабарып торған өлөшө. **Бит асыу** килен төшкәс, уны кейәүҙең ата-әсәһенә, туғандарына күрһәтеү йолаһы. **Бит бешеү** ныҡ оятҡа ҡалыу. **Битендә ҡаны юҡ** *ҡар.* **ҡан** [1]. **Бит йыртыу** намыҫты рәнйетеү. *[Сәмиғулла:] Бит йыртып шунан [байҙан] йомош һорай буламмы?* Ж. Кейекбаев. **Бите[н] йыумаған** *ҡар.* **күн бит.** *Уның ҡулына барып эләкһәң, .. сәкелдәтеп ҡуйыуы бар. Ул бит битен йыумаған.* И. Насыри. **Биткә ҡара яғыу** *шул уҡ* **йөҙгә ҡара яғыу** (*ҡар.* **йөҙ** [1]). **Биттән алыу** кеше алдында әрләү. **Бит һыйпау** ниҙәндер яҙыу. **Бит һыуын түгеү** *шул уҡ* **йөҙ һыуын түгеү** (*ҡар.* **йөҙ** [1]). **Күн бите** *ҡар.* **күн** [2] 2. **Күн** (*йәки* **ер**) **бит** оятһыҙ, намыҫһыҙ. — *Был Имайҙың ғына эше булыр. Бер тин тиһәң, иманын һата, йөҙө ҡара, күн бит!* Һ. Дәүләтшина. **Ҡара бит** *шул уҡ* **ҡара йөҙ** (*ҡар.* **йөҙ** [1]). **Ҡояш бите** *шул уҡ* **күн бите** (*ҡар.* **күн** [2] 2). **Ниндәй бит менән**

берәй әҙәпһеҙ эшләнгән эштән, рәнйетеүҙән һ.б. һуң күренергә оялып, уңайһыҙланып ҡалғанда әйтелә. *Әгәр ҙә миңә үҙебеҙҙекеләр ягына сыгырга тура килһә, мин ниндәй бит менән барып күренермен?* Б. Хәсән. **Төн битендә** *ҡар.* **төн** 1.

**БИТ** [2] *и.* **1.** Китаптағы, дәфтәрҙәге һ.б. ҡағыҙҙың бер яғы. *Дәфтәр бите. Китап бите. Газетаның дүртенсе битенән мин уҡырга тейеш ерҙе бармаҡ менән төртөп күпһәттеләр.* С. Агиш. *Һәр бер бите, хатта һәр бер юлы уйҙарымдай таныш китаптың.* Х. Ҡунаҡбай. / Китаптағы, дәфтәрҙәге һ.б. билдәле бер үлсәм менән ҡырҡылған ҡағыҙ. *Бер бит ҡагыҙ. Блокноттың битен йыртып алыу.*

**2.** *күсм.* Ниҙеңдер үҫешендәге бер осор, этап; сәхифә. *Тарихтың бер бите.*

♦ **Яңы бит асыу** яңы осор, яңылыҡ башлау. *Тормош яңы битен серен асҡан, һәр яңыга үҫмер шатланган.* М. Хәй.

**БИТ** [3] *киҫ.* Әйткән фекерҙе раҫлап, көсәйтә. *Йәш күңел бит инде, миңә тәү башлап калага барыу ҙа ҡыҙыҡ булып тойолдо.* Т. Йәнәби. — *Бурылкайым, мин бит яҡшы инем, эш эшләнем, түктем тиремдә.* Ғ. Сәләм.

**БИТАРАФ** [*фарс.* ⟨ *гәр.*] *с.* Бер яҡҡа ла ҡатнашмаған, бер яҡлы ла түгел. *Битараф кеше. Битараф булыу.* ■ — *Бер тауыштан,— тип ҡуйҙы йыйылышта председателлек иткән Әхмәҙуллин ҡарт, дәррәү күтәрелгән ҡулдарҙы күреп.* — *Юҡ, бер битараф бар, Гәрәй ҡарт битараф.* Д. Исламов.

**БИТАРАФЛАШЫУ** *ҡ.* Битараф хәлгә килеү.

**БИТАРАФЛЫҠ** *и.* Битараф мөнәсәбәт. *Битарафлыҡ һаҡлау.*

**БИТЛЕК** [1] *и.* **1.** Биткә кейә торған япма. *Битлек бәйләгән Фәтхиә операция булмәһендә һуңгы әҙерлек эштәрен алып бара ине.* Р. Ғабдрахманов. / Умарта ҡарағанда биткә кейә торған селтәр. *Ғариф умартанан бал алганда кейә торган битлеген кейҙе.* Ғ. Хәйри.

**2.** *күсм.* Кемдеңдер ысын йөҙөн йәшереп торған хәйлә, алдыҡ. *Хәҙер агрессорҙарҙың битлеге тамам алып ташланды һәм донъяга уларҙың ысын йөҙө асылды.* «Совет Башҡортостаны», 1967, 13 июнь.

**БИТЛЕК** [2] *и.* **1.** Яулыҡ өҫтөнән маңлайға бәйләп ҡуя торған уҡа таҫма.

**2.** Өй ҡыйығының маңлайына ҡағылған таҡта.

**БИТЛӘК** *и. диал. ҡар.* **битләү** [1].

**БИТЛӘС** *и. диал. ҡар.* **битләү** [2].

**БИТЛӘҮ** [1] *и.* Тау битенең түбәндәге һөҙәгерәк өлөшө. *Ҡаҙыш ауылынан төньяктараҡ Мырҙагол тауы бар. Уның ике яҡ битләүе лә һөҙәк* (Хикәйәттән).

**БИТЛӘҮ** [2] *ҡ.* Тау, һырт битен буйлау. *Ҡая битләп һыгыла-бөгөлә һуҡмаҡ һуҙылган.* З. Биишева.

**БИТЛӘҮ** [3] *ҡ.* Ғәйепләп әйтеү. *Кеше алдында яманлап битләү.*

**БИТЛӘҮ** [4] *ҡ.* Китап, дәфтәрҙәрҙең битен асыу. *Ул [Шәмси] ҡулындагы китапты битләп ултырҙы ла уҡый башланы.* Ғ. Хәйри.

**БИТСАЯ** *с. диал.* Битһеҙ.

**БИТУМ** [*рус.* ⟨ *лат.*] *и.* Ыҫмалаланып торған углеводородлы йәбешкәк (тәбиғи һәм яһалма) матдәләрҙең дөйөм исеме. *Битум установкалары.* ■ *Ҡайһы бер илдәрҙә нефть битумдары төҙөлөш эшендә ҡулланылган.* Д. Бураҡаев.

**БИТҺЕҘ** *с.* Оялыу, тартыныуҙы белмәгән намыҫһыҙ; оятһыҙ. *Битһеҙ кеше. Битһеҙ булыу.*

● *Битһеҙ бүркен баҫмаҫ.* Мәҡәл.

**БИТҺЕҘЛӘНЕҮ** *ҡ.* Оят, намыҫты юғалтыу, оятһыҙлыҡ күрһәтәү.

**БИТӘ** *и.* Саңғының аяҡ башын кейҙерә торған яҫы бауы.

**БИТӘЛ** [*рус.* фитиль] *и.* Ептән үргән ҡанатлы мурҙа.

**БИТӘР** [1] *и.* Йөҙ йыртып әйтелгән һүҙ. *Бей битәрен ишеткән, йәнен бейҙән өшөткән ил күрмәйенсә, кем күрер* (Ҡобайырҙан).

**БИТӘР** [2] [*фарс.*] *р.* Артыҡ, бигерәк, нығыраҡ. *Беҙ үҙебеҙҙән битәр аттарҙы йәлләй торгайныҡ.* С. Агиш. *[Хәмиҙә:] Шатландыҡ. Минән битәр килен шатланды.* С. Ҡудаш.

**БИТӘР** [3] *р. ҡар.* **бикәр** 2.

**БИТӘРЛӘҮ** *ҡ.* Ғәйепләп; йөҙ йыртып әйтеү; әрләү. *Атаһы ҡерһә лә сыҡһа ла, бер сәбәп тапҡан булып, Зәйнәпте битәрләй.* М. Ғафури.

**БИФШТЕ́КС** [*рус.* ⟨ *ингл.*] *и.* Түшкәнең урта өлөшөн киҫәкләй ҡырҡып ҡурылған һыйыр ите.

**БИХАЯ** [*фарс.* ⟨ *гәр.*] *с. иҫк.* Оятһыҙ, намыҫһыҙ, хисапһыҙ. *Бугәсәү батыр янына гәскәр килгән бихисап: эйәрләп атка менгән дә, биленә ҡылыс әлгән дә.* Салауат Юлаев.

**БИХӘБӘР** [*фарс.* ⟨ *гәр.*] *с. иҫк.* Хәбәрһеҙ, мәғлүмәтһеҙ. *Хәрби эштән хәбәр булыу.*

**БИҺУШ** [*фарс.*] *с. иҫк.* Һушһыҙ, иҫһеҙ.

**БИШ** *төп һ.* **1.** 5 һаны. *Биш бишең егерме биш.* / Кем йәки нәмәнең 5-кә тиң иҫәбе. *Биш кеше. Биш алма. Биш көн.* ■ *Аталарын дүрт күҙ менән көтөп торган биш бала, өнһөҙ, шау-шыуһыҙ ҡаршы алды.* Ғ. Дәүләтшин. *Командир ҙа булган Ҡаһым түрә командаһын көнөнә биш урай* (Халыҡ йырынан).

**2.** *и. мәг.* Биш баллы баһа системаһындағы бик яҡшы билдәһе. *Биш алыу. Бишкә генә уҡыу.*

♦ **Бергә бишкә ҡушыу** *йәки* **берҙе биш итеү** берәй нәмәне арттырып һөйләү; шапыртыу. *Яңы ваҡигалар тураһында һөйләйҙәр, ялганлайҙар, бергә биште ҡушалар.* И. Насыри. **Биш былтыр** әллә ҡасан, бик күптән. *[Ғәрифә:] Шул ялкау ҡыҙҙан туйҙым [Заһит:] Ә минең һинән туйганыма биш былтыр инде.* С. Мифтахов. **Биш былтырғы** әллә ҡасанғы, бик күптәнге. **Бишкә бөгөлөү** ярамһаҡланып, өлтөрәп тороу. *Түрә алдында бишкә бөгөлөү.* **Үҙ бише биш** үҙен генә ҡайғыртҡан кешегә ҡарата әйтелә.

**БИШБАРМАҠ** [1] *и.* Тураған ит менән эре һалманан торған тоҙлоҡло аш; ҡуллама. *Бишбармаҡ бешереү.*

**БИШБАРМАҠ** [2] *и.* Башҡорт ҡатын-ҡыҙ бейеүе. *Фирүзә сәхнәгә сыгып, бишбармаҡты бейене.* К. Мәргән.

**БИШБАРМАҠ** [3] *и. диал.* Бирсәткә.

**БИШБАРМАҠ** [4] *и. диал.* Бишташ.

**БИШБАШ** *и.* Биш көлтәнән торған һоҫлан.

**БИШЕК** *и.* **1.** *ҡар.* **сәңгелдәк.**

**2.** *күсм.* Кемде йәки ниҙелер тыуҙырған, үҫтергән ер. *Тыуган, үҫкән илем — ал бишек, алгыһатыр инде ҡайтырга* (Халыҡ йырынан).

● *Үҙ илең — алтын бишек, башҡа илдең төбө тишек.* Мәҡәл.

**БИШЕНСЕ** *рәт һ.* Урын тәртибе 5 менән билдәләнгән. *Бишенсе йыл. Бишенсе көн. Бишенсе цех.* ■ *Пассажир поезы киткән, тик бишенсе юлда ғына паровозһыҙ тауар составы тора.* Б. Бикбай.

**БИШҠУНАҠ** *и.* Апрель бураны (апрелдең 14-нән 18-нә тиклемге).

**БИШЛЕ** *с.* **1.** Үлсәме биш берәмеккә тиң. *Бишле калуш. Бишле шәм.*

**2.** *диал. ҡар.* **биш** 2.

**БИШЛЕК** *и. һөйл.* Биш һумлыҡ ҡағыҙ аҡса.

**БИШЛӘП** *сама һ.* Биш тирәһе, бишкә яҡын. *Бишләп кеше.*

**БИШЛӘТӘ** *р.* Биш тапҡыр. *Бишләтә артыҡ.* ■ *Бәхет яулағанға бәхет бишләтә килһен!* Б. Бикбай.

**БИШМЫЙЫҠ** *и. диал.* Бапаҡ.

**БИШМӘТ** *и.* **1.** Һырып тегелгән оҙон итәкле, оҙон еңле йылы өҫ кейеме. *Тышын ҡыҙыл кергәзиндән, эсен ҡара бәҙдән ҡуйып, мамыҡ менән һырып, бишмәт тектерҙеләр.* М. Ғафури. *Бишмәтендә һинең биш төймә, шул бишмәтҡәйеңде күп киймә* (Халыҡ йырынан). **Билле бишмәт** билен бөрөп, нәҙек итеп теккән бишмәт.

**2.** *диал.* Камзул.

**БИШНӘК**[1] *и.* Тар итеп йырып, сит-ситен көплләп ағыҙған һыу. *Кәмә тирмән бишнәгенән һыу урғнә күтәрелде.* Ғ. Хәйри.

**БИШНӘК**[2] *и. тар.* **1.** Мәңгелек, ғүмерлек (һатылған ергә ҡарата). *Ерҙе бишнәккә һатыу.*

**2.** Ерен мәңгелеккә һатҡан кеше. *Ураҡсыларҙың күбеһе — ерҙәрен һатып, ерһеҙ ҡалып, бер нисә йылдан бирле бишнәк исеме күтәреп йөрөгән башҡорттар.* Һ. Дәүләтшина.

**БИШТАШ** *и.* Балалар уйыны (йомро ғына биш ташты һикертеп, бармаҡ араһынан төрлөсә үткәреп уйнайҙар).

**БИШТӘР** [*рус.* бестарка] *и. диал. ҡар.* **артмаҡ** 2.

**БИШТӘРЛӘҮ** *к. диал. ҡар.* **артмаҡлау** 1.

**БИШУЛ** *и.* Бер башҡорт ырыуының исеме.

**БИШӘЙ** *и.* Бер башҡорт ырыуының исеме.

**БИШӘМБӘК** *и. диал.* Бишташ.

**БИШӘР** *бүл. һ.* Һәр бере биштән торған, **бишкә тиң.** *Бишерҙән бүлеү. Кеше башына бишәр алма.*

**БИШӘРЛӘП** *р.* Бишәр итеп, биш иҫәбенән.

**БИШӘҮ** *йыйн. һ.* Биш кеше йәки нәмә.— *Беҙ бер итәктә бишәү үҫтек, бер ҙа генә талашмай торғайныҡ!* С. Агиш.

● *Алғанға алтау ҙа аҙ, биргәнгә бишәү ҙә күп.* Мәҡәл.

**БИШӘҮЛӘП** *р.* Биш кеше бергә.— *Мин Аҡъял батыр булам. Ә былар юлдаштарым. Бишәүләп донъя ҡыҙырып йөрөп ятабыҙ.* (Әкиәттән).

**БИШӘҮЛӘШЕП** *р.* Биш кеше бергәләшеп. *Бишәүләшеп эшләү.*

**БЛАНК** [*рус.* ⟨*фр.*] *и.* Тейешле урынын тултырып яҙыу өсөн ерлеге әҙерләнгән ҡағыҙ. *Бланк тултырыу.*

**БЛАТ** [*рус.*] *и. һөйл. ҡар.* **танышлыҡ** 2. *Блат менән алыу.*

**БЛИНДА́Ж** [*рус.* ⟨*фр.*] *и. хәрби* Туптан һаҡланыу өсөн ергә ҡаҙып, өҫтән ныҡ итеп ябып эшләгән ҡоролма. *Окоптар тәрән ҡаҙылған, блиндаждар ныҡ эшләнгән. Эре туп төшмәһә, ваҡ туптар алдырырлыҡ түгел.* Д. Юлтый.

**БЛОК**[1] [*рус.* ⟨*фр.*] *и.* **1.** Бер нисә дәүләт, партия йәки ойошманың бергә эш итеү маҡсатындағы берекмәһе. *Блокка инеү.*

**2.** Бер нисә өлөштән торған бер ҡоролма. *Быйыл сафҡа индереләсек объекттарҙың иң мөһиме — катализатор блогы.* «Совет Башҡортостаны», 1966, 1 март.

**3.** Ҙур итеп бетондан эшләнгән стена өлөшө. *Тимерле бетон блок.*

**БЛОК**[2] [*рус.* ⟨*ингл.*] *ҡар.* **сығыр** 1.

**БЛОКА́ДА** [*рус.* ⟨*ингл.*] *и.* **1.** Ниҙеңдер ғәскәр менән уратып, бикләп алыныуы; ҡамау. *Блокадаға алыу. Блокадала ҡалыу.*

**2.** *күсм.* Дәүләттең бөтә булған сит бәйләнештән мәхрүм ителеүе. *Политик блокада. Экономик блокада.*

**БЛОКАДАЛАУ** *к.* Блокадаға алыу, блокадала тотоу.

**БЛОКНО́Т** [*рус.* ⟨*фр.*] *и.* Йыртып алынмалы биттәрҙән торған бәләкәй яҙыу дәфтәре; ҡуйын дәфтәре.

**БЛУ́ЗА** [*рус.* ⟨*фр.*] *и.* Билен быумай кейә торған киң ирҙәр күлдәге. *Эш блузаһы.* / Йоҡа тауарҙан иркен итеп тегеп, юбка өҫтөнән төшөрөп кейә торған ҡатын-ҡыҙ кофтаһы.

**БО́БРИК** [*рус.*] *и.* **1.** Тырпайып торған өбөрөлө буҫтау. // *Бобрик пальто.*

**2.** Ирҙәрҙең тырпайтып, ҡыҫҡа итеп алдырылған сәсе.

**БОБСЛЕ́Й** [*рус.* ⟨*ингл.*] *и. спорт.* Руле ярҙамында идара итмәле санала тауҙан шәп төшөү ысулы. *Мәләүез сана-бобслей трассаһы халыҡ-ара стандартҡа тулыһынса яуап бирә.* «Совет Башҡортостаны», 1986, 7 февраль.

**БОҒА** *и.* Тоҡом үгеҙе.

♦ **Күл боғаһы** *ҡар.* **мөңгөгөр.**

**БОҒАҘ** *и.* **1.** Муйындың ҡыҙыл үңәсте һәм боғарлаҡты эсенә алған алғы өлөшө. *Боғазды быуыу. Боғазға йәбешеү.*

**2.** Ике күл йәки диңгеҙҙе бер-беренә тоташтырып торған тар һыу.

♦ **Боғаздан алыу** ҡыҫмаҡҡа алыу, быуып алыу. *Аҡса һорап боғаздан ала.* ■ *Атайым: „Бөгөн булмаһа, иртәгә боғазығыҙҙан алырбыҙ",— тип кемдәргәлер янай.* Д. Юлтый. **Боғазын сәйнәү** *шул уҡ* **алҡымын сәйнәү** (*ҡар.* **алҡым**). **Буш боғаз** бушҡа шау-шыу күтәреп йөрөгән кешегә ҡарата әйтелә.

**БОҒАЗЛАУ** *к.* **1.** Боғаздан салыу. *Боғазламай эсер [хан] ҡаныңды, үлтермәй алыр йәнеңде* (Ҡобайырҙан).

**2.** Боғазын сәйнәү (йыртҡысҡа ҡарата). *Бүре һарыҡты боғазлап киткән.*

**БОҒАҠ** *и.* **1.** Ҡош ашҡаҙанының тәүге бүлеге.

**2.** Һыйыр малының үңәс аҫтындағы һалынып торған ите.

**3.** *ҡар.* **ҡуштамаҡ.** *Боғаҡ ауырыуы.*

♦ **Боғаҡ биҙе** *анат.* Умыртҡалыларҙың күкрәк башында урынлашҡан бер биҙ.

**БОҒАЛ** *и.* Аҫау йылҡыны муйынына ташлап тота торған тоҡанлы оҙон арҡан. *Боғал ташлау. Боғал һалыу. Боғал менән тотоу.*

**БОҒАЛАҠ** *и.* **1.** *ҡар.* **боғал.** *Боғалаҡ һалыу.*
**2.** *ҡар.* **мәскәү**[1].

**БОҒАЛАҠЛАУ** *ҡ. ҡар.* **боғаллау.** *Боғалаҡлап тотоу. Боғалаҡлап бәйләп ҡуйыу.*

**БОҒАЛЛАУ** *ҡ.* Боғал һалыу. *Айғырҙы боғаллап тотоу.*

**БОҒАН** *и.* Атаһы йәшел, инәһе көрән башлы аҡ өйрәк.

**БОҒАНА** *и. диал.* БыҒым.

**БОҒАРА** *и. а. х.* Урта Азиялағы һуғарылмай торған баҫыу һәм шул ерҙәге сәсеүлек. *Боғара игенселеге.*

**БОҒАРЛАҠ** *и. анат.* Тын юлының боғаҙдан артабанғы өлөшө.

**БОҒОР-БОҒОР** *окш.* Атлығып ҡайнағандағы йәки урғылғандағы тауышты белдергән һүҙ. *Боғор-боғор бутҡа бешә.*

**БОҒОРЛАУ** *ҡ.* Боғор-боғор итеү, боғор-боғор килеү. *Боғорлоғо сығыу. Боғорлап ҡайнау. Бутҡа боғорлап бешә.*

**БОҒОУ** [боҡ*ғ*] *ҡ. диал. ҡар.* **боҡайыу** 1.

**БОҘ** *и.* **1.** Туңған һыу. *Йоҡа боҙ. Көҙгө боҙ. Боҙ китеү. Боҙ ҡаплау.* ■ *Йәйрән ятҡан ялтыр һыу өҫтөнә көҙгө кеүек ялтыр боҙ туңған.* Ғ. Амантай.
**2.** *диал. ҡар.* **борсаҡ**[2]. *Боҙ яуыу.*

**БОҘҒАЛАҠ** *и. диал. ҡар.* **боҙлауыҡ** 2.

**БОҘҒАЛАҠЛАНЫУ** *ҡ. диал.* Боҙлауыҡланыу.

**БОҘҒОЛАУ** *ҡ.* Төрлө ерҙән боҙоу, тотош боҙоу. *Боҙғолап ташлау.*

**БОҘҘОРОЛОУ** *ҡ. төш. ҡар.* **боҙҙороу.**

**БОҘҘОРОУ** *ҡ. йөкм. ҡар.* **боҙоу.**

**БОҘЛАНЫУ** *ҡ.* Боҙ менән ҡапланыу. *Ек-ектәре боҙланған .. ишек асылып китте.* Ф. Иҫәнғолов.

**БОҘЛАУЫҠ** *и.* **1.** Бөрсөк-бөрсөк боҙ булып яуған яуын. *Ҡар ҡатыш ямғыр, боҙлауыҡ яуып торған рәшҡылы яҙ көнө ине.* Һ. Дәүләтшина.
**2.** Ерҙе ҡаплап туңған боҙ. *Ишек алды боҙлауыҡ.*
**3.** *диал. ҡар.* **борсаҡ**[2]. *Игенде боҙлауыҡ һуҡҡан.*

**БОҘЛАУЫҠЛАНЫУ** *ҡ.* Боҙ менән ҡапланып туңыу.

**БОҘЛО** *с.* **1.** Боҙ ҡатнаш. *Боҙло һыу.* ■ *Күңел әрней, әрней боҙло һалҡын, буранлы ел мине һуҡҡанға.* Ш. Бабич.
**2.** Боҙ менән ҡапланған; тайғаҡ. *Боҙло юл.*

**БОҘЛОҠ** *и.* **1.** Мәңгелек боҙ менән ҡапланған ер. *Бөтә донъялағы боҙлоҡтарҙың майҙаны Европа еренән байтаҡ артыҡ.* «Совет Башҡортостаны», 1965, 7 март.
**2.** *диал.* Ҡар баҙы (*ҡар.* **баҙ** 1).

**БОҘОҠ** *с.* **1.** Бер ере боҙолоп, яраҡһыҙға әйләнгән. *Боҙоҡ машина. Боҙоҡ сәғәт.*
**2.** Сир тейгән; сирле. *Боҙоҡ теш.* ■ *Ғәйшә,— тинем мин,— ҡыҙҙәре матур ҡыҙҙарҙың ашҡаҙаны боҙоҡ буламы ни?* С. Агиш.
**3.** Зарарланып, сифатһыҙға әйләнгән. *Боҙоҡ алма. Боҙоҡ картуф.*
**4.** Ямғырлы һыуыҡ; йонсоу. *Боҙоҡ көн.* ■ *Тик ҡояшты болот ҡаплап китә көндәр боҙоҡ, йонсоу заманда.* М. Кәрим. / Күңелһеҙ, асыулы. *Боҙоҡ кәйеф. Боҙоҡ сырай.*
**5.** Яман, насар. *Боҙоҡ кеше. Боҙоҡ уй.*
● *Төҫө боҙоҡтоң эсе боҙоҡ.* Мәҡәл. *Юл боҙоғо аяҡҡа көс.* Мәҡәл.

**БОҘОҠЛОҠ** *и.* Насар, яман ҡылыҡ; ямանлыҡ. *Боҙоҡлоҡ эшләү.* ■ *Боҙоҡлоҡ ҡылыуҙа байҙар синыфының сауҙагәре лә, мулла-ишаны ла, түрәһе лә мужиктарҙан арттырғанын Билал миҫалдар килтереп һөйләне.* А. Таһиров.

**БОҘОЛОУ** *ҡ.* **1.** *төш. ҡар.* **боҙоу** 1.
**2.** Төҙөк түгел хәлгә килеү, эшлектән сығыу. *Арба боҙолған. Машинка боҙолған. Сәғәт боҙолған.* / Булған сифаты юҡ булып яраҡһыҙланыу. *Баҫыу боҙолған. Сабынлыҡ боҙолған.*
**3.** Зарарланып, ауырыу, зәғиф булыу. *Күҙ боҙолоу. Сәләмәтлек боҙолоу.*
**4.** Зарарланып, насар, сифатһыҙ булыу. *Алма боҙолған.*
**5.** Булған йүнәлештән сығып, боларыу; боларып, юҡҡа сығыу. *Уйын боҙолоу.* / Булған уңай хәл юҡҡа сығыу. *Тынлыҡ боҙолоу.* / Булған ыңғай хәлдән ҡаршылыҡлы хәлгә килеү. *Ара боҙолоу. Мөнәсәбәт боҙолоу.*
**6.** Мотлаҡ нәмә үтәлеүҙән тайшаныу. *Ант боҙолоу. Вәғәҙә боҙолоу. Закон боҙолоу. Йола боҙолоу.*
**7.** Насар яҡҡа үҙгәреү. *Көн боҙолоу. Кәйеф боҙолоу. Сырай боҙолоу. Холоҡ боҙолоу.* ■ *Әле генә тып-тын торған һауа ҡапыл боҙолоп, ҡара болот сыҡты, ел ҡуҙғалды.* М. Тажи. *[Йыһанша] оҙаҡ эшләне... Колхозды аяҡҡа баҫтырҙы. Тик һуңға табан, картая килә, боҙолдо. Маҡтау күп тейҙе шул үҙенә.* Р. Солтангәрәев.

**БОҘОЛОШОУ** *ҡ.* **1.** *урт. ҡар.* **боҙолоу** 2. *Машиналар боҙолошоп ултыра.*
**2.** Үҙ-ара мөнәсәбәтте боҙоу. *[Ҡаныш:] Беруҡ боҙолошмағыҙ, татыулыҡ менән башҡарығыҙ изге эштең изге ыҙанын.* Х. Ғәбитов.

**БОҘОМ** *и. диал. ҡар.* **сихыр** 1.

**БОҘОР** *и. диал.* Быжыр.

**БОҘОРА** *и. диал.* Сыңға.

**БОҘОРОҠ** *и. диал. ҡар.* **быжыр** 2.

**БОҘОУ** *ҡ.* **1.** Йыйып ҡоролған нәмәне кире таратыу. *Мейесте боҙоу. Өйҙө боҙоп яңынан һалыу.* / Тотош бер бөтөн нәмәне киҫәк-киҫәккә бүлгеләү. *Аҡназар таң менән тороп ит боҙҙо.* Ғ. Дәүләтшин.
**2.** Төҙөк түгел хәлгә килтереү, эшлектән сығарыу. *Арбаны боҙоу. Машинаны боҙоу. Сәғәтте боҙоу.* / Файҙалана алмаҫлыҡ, яраҡһыҙ хәлгә килтереү; яраҡһыҙландырыу. *Машина йөрөп, сабынлыҡты боҙған.*
**3.** Зарарлап, ауырыу, зәғиф итеү. *Күҙҙе боҙоу. Сәләмәтлекте боҙоу.* ■ *Шәүәли .. ниндәйҙер дарыу һалып ҡолағын боҙған.* Б. Бикбай.
**4.** Зарарлап, насар, сифатһыҙ итеү. *Алманы боҙоу. Ямғырға ҡалдырып, картуфты боҙҙолар.*
**5.** Булған уңай хәлде юҡҡа сығарыу. *Тынлыҡты боҙоу.* / Булған ыңғай хәлдән ҡаршылыҡлы хәлгә килтереү. *Араны боҙоу. Мөнәсәбәтте боҙоу.*

**6.** Мотлаҡ нәмәне үтәүҙән тайшаныу. *Антты боҙоу. Вәғәҙәне боҙоу. Законды боҙоу. Йоланы боҙоу.* / Билдәләнгән нәмәне иҫәпкә алмай, аша баҫыу. *Дәүләт сиген боҙоу.*

**7.** Насар яҡҡа үҙгәртеү. *Кәйефте боҙоу. Холоҡто боҙоу. Төньяҡтан ел иҫеп, көндө боҙҙо.* ■ *[Күсәк:] Илама һин боҙоп төҫөң бөтә ырыуың ҡыйралғанда бирәү өсөн.* «Бабсаҡ менән Күсәк». — *Түрә насар түгел ине. Боҙҙоҡ. Кем уҙарҙан шаулап маҡтаныҡ.* К. Даян.

♦ **Ҡанды боҙоу** *ҡар.* **ҡан**[1] **1. Эш боҙоу** *ҡар.* **эш. Эште боҙоу** *ҡар.* **эш. Тәртип боҙоу** *ҡар.* **тәртип.**

● *Йөрөй белмәгән юл боҙор, әйтә белмәгән һүҙ боҙор.* Мәҡәл *Ҡаршы кеше уйын боҙор, тиҫкәре кеше йыйын боҙор.* Мәҡәл. *Ярҙы һыу боҙа, әҙәмде һүҙ боҙа.* Мәҡәл.

**БОҘОШОУ** *к. урт. ҡар.* **боҙоу** 1, 2. *Өйҙө боҙошоу.*

**БОҘУАТҠЫС** *и.* Боҙҙо ярып йөрөй торған карап.

**БОЕВО́Й** [*рус.*] *с.* **1.** *ҡар.* **хәрби.**

**2.** *ҡар.* **яусыл.**

**БОЖОР** *и. диал.* Сел.

**БОЖРА** *и. диал.* Дүңгәләк, ҡулса.

**БОЗОР**[1] *и. иҫк. ҡар.* **бөрөс** 3. *Халыҡ гәмен кем йыйыр? Урмандан уҡ һайлаған, дошманға бозор ҡайраған — шул йыйыр ау, шул йыйыр* (Ҡобайырҙан).

**БОЗОР**[2] *и. диал.* Быжыр.

**БОЗОРТМАҠ** *с. диал.* Быжыртмаҡ.

**БОЙҘА** *и. иҫк.* Ҙур бысаҡ; хәнйәр.

**БОЙҘАЙ** *и.* **1.** Орлоғонан аҡ икмәк һәм башҡа икмәк нәмәләре бешереү өсөн он әҙерләй торған башаҡлы үҫемлек. *Ҡылсыҡлы бойҙай. Ужым бойҙайы. Яҙғы бойҙай.* ■ *[Ғәйни:] Ялан-ға барып, ашлыҡтарҙы ҡарап ҡайтырға уйлап торам әле .. Бойҙайҙың ҡыйы булһа, уташтырырбыҙ.* Т. Йәнәби. **Туҡал бойҙай** ҡылсыҡһыҙ бойҙай.

**2.** Шул башаҡлы үҫемлектең орлоғо. *Бер бот бойҙай. Бойҙай оно.*

♦ **Мәккә** (*йәки* **кәғбә**) **бойҙайы** кукуруз. **Ожмах бойҙайы** *диал.* күмәгәй. **Тиле** (*йәки* **ауһар**) **бойҙай** ашлыҡ араһында үҫә торған бер сүп үләне.

**БОЙКО́Т** [*рус.* ⟨ *ингл.*] *и.* Дәүләт, ойошма йәки айырым кеше менән бөтә төр бәйләнеште өҙөүҙән ғибарәт булған көрәш ысулы. *Бойкот белдереү.*

**БОЙЛОҠҺОҘ** *с.* **1.** Бәүелен тота алмаған (кешегә ҡарата). *Бойлоҡһоҙ бала. Бойлоҡһоҙ булыу.*

**2.** *күсм.* Туҡтай алмай ярһыған. *Батша менән батша ҡатыны илай торғас, бойлоҡһоҙ булып бөттө, ти* (Әкиәттән). // *Ямғыр бойлоҡһоҙ ҡоя ла ҡоя.* Б. Бикбай.

**БОЙНИ́ЦА** [*рус.*] *и.* Ныҡытманың атыу өсөн ҡулланылған тишеге. *Прапорщиктар һалдаттарҙы бойницаға тығылған мылтыҡтары янында баҫып торорға ҡуша.* А. Таһиров.

**БОЙОҒОУ** (бойоҡ*ғ*) *к.* Бойоҡ булыу, бойоҡҡа әйләнеү. *Заятүләк .. тыуған ерен һағынып бойоға, моңая башлай. Башына төрлө уй килә.* «Заятүләк менән Һыуһылыу».

**БОЙОҠ** *с.* Күңелһеҙ, төшөнкө уй, тойғоло. *Бойоҡ кеше.* ■ *Ә шулай ҙа ниңә һуң мин бойоҡ? Ниңә күңелем кемделер, нимәнелер юҡһынып, һыҡтап ҡына тора?* З. Биишева. / Күңелһеҙлек, төшөнкөлөк сағылдырған. *Бойоҡ төҫ.* / Күңелһеҙлек, төшөнкөлөк менән һуғарылған. *Бойоҡ тауыш.*

**БОЙОМ** *и.* **1.** Донъя кәрәк-яраҡы, нәмә. *Йортондағы бойомдан, уйынды бойомдан кемде айырмаҫ был үлем?* «Буҙйегет».

**2.** *күсм.* Булмыш, ғәмәл. *Бойомға инеү. Бойомға ярау. Бойомдан сығыу.*

♦ **Бойомға ашырыу** (*йәки* **атҡарыу**) *шул уҡ* **тормошҡа атҡарыу** (*ҡар.* **тормош**). **Бойомға ашыу** *шул уҡ* **тормошҡа ашыу** (*ҡар.* **тормош**).

**БОЙОНДОРОҠ** *и.* Кемдендер власы, ҡулы аҫтында, кемгәлер буйһоноуҙа булған хәл, эш-хәрәкәттә, фекерләүҙә һ. б. башҡаның ихтыярына, йоғонтоһона бәйле булған хәл. *Бойондороҡта булыу. Бойондороҡта йәшәү. Бойондороҡҡа төшөү.*

**БОЙОНДОРОҠЛО** *с.* Бойондороҡта булған. *Бойондороҡло ил.*

**БОЙОНДОРОҠЛОЛОҠ** *и. ҡар.* **бойондороҡ.**

**БОЙОНДОРОҠҺОҘ** *с.* Кемдеңдер власы, ҡулы аҫтында, кемгәлер буйһоноуҙа булмаған, эш-хәрәкәттә, фекерләүҙә һ.б. башҡаның ихтыярына, йоғонтоһона бәйле булмаған. *Бойондороҡһоҙ кеше. Бойондороҡһоҙ ил.*

**БОЙОНДОРОҠҺОҘЛОҠ** *и.* Бойондороҡһоҙ хәл. *Политик бойондороҡһоҙлоҡ.*

**БОЙОРОҠ** *и.* Ниҙелер эшләргә, башҡарырға ҡушҡан ҡәтғи күрһәтмә; әмер. *Бойороҡ биреү. Бойороҡто үтәү.* ■ *Беҙгә лә тимер сыбыҡ кәртәләре үтергә бойороҡ булды. Бойороҡҡа буйһоноп, һалдаттар алға ташланды.* Д. Юлтый.

♦ **Бойороҡ ҡылым** (*йәки* **һөйкәлеше**) ҡылымдың берәй эш-хәрәкәтте үтәргә бойороуҙы, ҡушыуҙы белдергән категорияһы.

**БОЙОРОУ** *к.* Ниҙелер эшләргә, башҡарырға ҡәтғи рәүештә ҡушыу; бойороҡ биреү. *Зилский .. Өмөтбайҙы ҡайтарырға бойорҙо. Түрә әйткәс, Ҡарасәс һүҙ көрәштереп тора алманы.* Ғ. Дәүләтшин.

♦ **Бойороғоҙ** рәхим итегеҙ. *[Әткол:] Йә ҡунаҡтарым, аштан бойороғоҙ.* Т. Хәйбуллин.

**БОКА́Л** [*рус.* ⟨ *фр.*] *и.* Эсемлек эсә торған махсус һауыт.

**БОКС**[1] [*рус.* ⟨ *ингл.*] *и.* Махсус ҡағиҙә буйынса йоҙроҡ менән һуғыша торған спорт төрө. *Бокс менән шөғөлләнеү.*

**БОКС**[2] [*рус.*] *и.* Ирҙәрҙең түбәлә генә ҡалдырып алдырылған сәсе. *Сәсте бокс итеп алдырыу.*

**БОКС**[3] [*рус.* ⟨ *ингл.*] *и.* Дауалау урындарындағы ауырыу кешене айырып тотоу бүлмәһе. *Ауырыуҙы боксҡа һалыу.*

**БОКСЁР** [*рус.* ⟨ *ингл.*] *и.* Бокс[1] менән шөғөлләнгән спортсмен. *Боксёрҙар ярышы.*

**БОКСИ́Т** [*рус.* ⟨ *фр.*] *и.* Ултырма тау тоҡомонан торған иң яҡшы алюмин рудаһы.

**БОҠАЙЫУ** *к.* **1.** Йомарланып ҡына сүгеү. *Боҡайып ултырыу.*

**2.** *диал. ҡар.* **боҫоу** 1.

**БОҠҺОУ**[1] *к. диал. ҡар.* **ҡаҡһыу**[1].

**БОҠҺОУ**[2] *с. диал. кар.* **ҡаҡһыу**[2].

**БОЛ**[1] [*фарс.*] *и. иҫк.* **1.** Аҡса. *Бол эшләү.* /Матди мөмкинлек; байлыҡ, мал. *Бол йыйыу.* ■ *[Нурғәли:] Иген сәсерлек бол булһа, мин дә бында утын тартып йөрөмәҫ инем.* С. Кулибай.

**2.** Ҡулға төшөргән мал; табыш. *Яу килгәндә өнһөҙ булһаң, хандың боло булырһың* (Ҡобайырҙан). / *күсм.* Файҙа. *Бол эҙләү. Бол табыу.*

**3.** *с. мәғ.* Ҡиммәтле, затлы. *Менгән дә атым ҡола дүнән, кейгән дә туным бол елән* (Халыҡ йырынан).

**БОЛ**[2]: **бол өйрәк** *шул уҡ* **беле өйрәк** (*кар.* **өйрәк**). *Бол, бол өйрәк, бол өйрәк, болдорап осор күлдән һуң* (Ҡобайырҙан).

**БОЛА** *и.* **1.** Бөтә нәмәһе теләһә нисек туҙҙырылған, йыйнаҡһыҙ хәл. *Өй эсен болаға әйләндереү. // Булмәһе минеке кеүек бола: .. паяльник, отвёртка кеүек тимер-томор туҙышып ята.* Р. Солтангәрәев.

**2.** Талаш, һуғышлы ғауға. *Бола сығарыу.*

**3.** Баҫым, ҡыҫымға ҡаршы ҡуҙғалған хәрәкәт. *Бола күтәрелеү.* ■ *[Был һалдаттар] ер сигендәге һуғыш өсөн түгел, эске болаларҙы баҫтырыу өсөн һаҡлана.* С. Агиш. // *Ҡаланы бер аҡтар, бер ҡыҙылдар алып торған бола ваҡытта Әхмәровтың хыялынан бер нәмә лә барып сыҡманы.* Б. Бикбай.

**БОЛАҠ** *и.* Бәләкәй йылға.

● *Һыуҙың башы болаҡтан.* Әйтем.

**БОЛАЛЫ** *с.* Бөтә халыҡты ҡуҙғатҡан ығы-зығылы; ғауғалы. *Болалы заман.*

**БОЛАМА** *и. диал. кар.* **бола** 2.

**БОЛАМСАЙ** *и. диал. кар.* **боламыҡ** 1.

**БОЛАМЫҠ** *и.* **1.** Ондан ғына болғатып бешергән шыйыҡ бутҡа һымаҡ аш. *Ашау өсөн иң шәбе — боламыҡ, сөнки уны сәйнәү мәжбүри түгел.* Р. Ғабдрахманов.

**2.** (*йәки* **арыш боламығы**) *күсм.* Үтә йомшаҡ холоҡло, йыуаш, булдыҡһыҙ кешегә ҡарата әйтелә. *Ротмистр ҡатып торған казактарға аҡырҙы: „Боламыҡтар!"* Я. Хамматов.

**БОЛАН** *и.* Айыры тояҡлы, тармаҡ-тармаҡ мөгөҙлө, көйөшлө эре хайуан. *Болан балаһы. Болан ите. Болан мөгөҙө. Йорт боланы. Ҡырағай болан. Төньяҡ халыҡтарында болан төп йорт хайуаны булып тора.*

**БОЛАНСЫЛЫҠ** *и.* Болан аҫрау хужалығы. *Болансылыҡ совхозы.*

**БОЛАНУТ** *и.* Оҙон һабаҡлы, ҡыҫҡыл ҡыҙыл йәки ал төҫтәге һепертке сәскәле урман үләне. *Таулы урман зонаһында балдың төп йыйымы боланут менән шыма көпшәнән була.* З. Байбурин.

**2. боланут тар, боланут һымаҡтар** *бот.* Бәбәге ике өлөшлө үҫемлектәр ғаиләһе (боланут, фуксия һ. б.)

**БОЛАРТЫУ** *к.* **1.** Тәртипһеҙ, йыйнаҡһыҙ хәлгә килтереү; туҙҙырыу. *Өй эсен болартыу. Сәсте болартыу.*

**2.** Тынысһыҙ хәлгә килтереү. *Араны болартыу. Донъяны болартыу.*

**БОЛАРЫНҠЫ** *с. кар.* **болалы.** *Боларынҡы ине шул заманалар. Һәр ҡайҙа алдап-йолдап, завод тип, башҡорттарҙың ерҙәрен һалдырып алалар.* Ғ. Хөсәйенов.

**БОЛАРЫУ** *к.* **1.** Тәртипһеҙ, йыйнаҡһыҙ хәлгә килеү; туҙыу. *Өй эсе боларған.* ■ *Боларған шырт сәстәрен һыпыра-һыпыра булмәгә бер егет килеп инде.* Р. Солтангәрәев.

**2.** Ығы-зығы килеү; сыуалыу. *Өй тирәһендә уҙ йомоштары менән боларып йөрөгән ҡатын-ҡыҙҙар .. күренә.* Д. Юлтый.

**3.** Шау-шыу тауыш ҡуптарыу. *Табын күңелле үтте .. Харис менән Фәхри ҙә артығын эсмәне, болармаңы.* Б. Бикбай.

**4.** Талаш, һуғышлы тынысһыҙ хәлгә килеү. *Ара боларыу.* ■ *[Хаммат:] Донъялар боларып тора. Төрлө яҡлап аҡтар баш ҡалҡыта.* З. Биишева.

**5.** *диал.* Ярһыу. *[Ғәйнулла:] Күңелем боларғанда әйтеп ҡалам, башҡа саҡта баҙнат итә алмам.* М. Кәрим.

♦ **Төш боларыу** *кар.* **төш.**

**БОЛАСЫ** *и.* Баҫым, ҡыҫымға ҡаршы ҡуҙғалған хәрәкәттә ҡатнашыусы. — *Атайымдың төрмәгә ябылыуы беҙгә бик ҙур ауырлыҡ килтерҙе.— „Боласы бисәһен тотмайым!" — тип, теген мастерскойының хужаһы .. әсәйемде лә эштән ҡыуып сығарған.* Ф. Иҫәнғолов.

**БОЛАСЫЛ** *с.* Бола (2, 3 мәғ.) ҡуптарыусан. *Аҡтарҙы Веткалов байҙары ҡотортоп ебәрә: „Башҡорттар ярлы, боласыл халыҡ, улар ҡыҙылдар яҡлы",— ти.* Б. Бикбай.

**БОЛАУ** *к. кар.* **боларыу** 1. *Болап осҡан ҡус.*

**БОЛАШЫУ** *к. диал.* **1.** *кар.* **булышыу** 2.

**2.** Тарҡылашыу, талашыу. *Уйынсыҡҡа болашыу.*

**БОЛГАР** *и.* Болгарияның төп халҡын тәшкил иткән милләт һәм шул милләттең бер кешеһе (славян телдәренең береһендә һөйләшә). *Болгар халҡы. Болгар ҡатыны. Болгар теле.*

**БОЛГАРСА** *р.* **1.** Болгар телендә. *Болгарса һөйләшеү.*

**2.** Болгарҙарға хас рәүештә. *Болгарса бейеү. Болгарса кейенеү.*

**БОЛҒАҠ** *с.* Ара бутап йөрөүсән. *Болғаҡ кеше.*

**БОЛҒАЛАНЫУ** *к.* Тегеләй-былай болғаныу. *Болғаланып, ерҙе мансып йәшкә, юлдарыма томан сылана.* Б. Вәлит.

**БОЛҒАЛАУ** *к.* Тегеләй-былай болғау. *Малбайҙы ла дошман боғазлап киткәс, һөйләшә алмай телен болғалай* (Халыҡ йырынан).

**БОЛҒАНДЫРЫУ** *к.* **1.** Әйләндереп-әйләндереп, аҫтын өҫкә килтереү; болғау. *Ал биҙерә, гөл биҙерә һыуҙарҙы болғандыра* (Халыҡ йырынан).

**2.** Болғансыҡҡа әйләндереү; болғансыҡлау. *Тау һырттарынан ағып төшкән аҡ күбекле йырғанаҡтар Ташлыкүп йылғаһын болғандырып шаулатты.* Н. Ғәлимов.

♦ **Күңелде болғандырыу** ҡоҫҡоно килтереү, күңелгә тейеү.

**БОЛҒАНСЫҠ** *с.* **1.** Ләм, бысраҡ ҡатыш; бурьяҡ. *Болғансыҡ һыу. Болғансыҡ йылға.*

**2.** *күсм.* Тәртипһеҙ, сиратһыҙ, әҙмә-әҙлекһеҙ; буталсыҡ. *Башта шатлыҡлы ла, томанлы ла төрлө болғансыҡ уйҙар бутала.* Х. Ҡорбанаева.

**3.** *күсм.* Ығы-зығылы, тынысһыҙ.

**БОЛҒАНСЫҠЛАНЫУ** *к.* Болғансыҡҡа әйләнеү. *Һыу болғансыҡланып аға ла аға.* К. Кинйәбулатова.

**БОЛҒАНСЫҠЛАУ** *к.* Болғансыҡҡа әйләндереү; болғандырыу. *Һыуҙы болғансыҡлау.*

**БОЛҒАНЫУ** *к.* **1.** *төш. кар.* **болғау**[1] 2, 3.

**2.** Бер тирәлә уралыу; сыуалыу, буталыу. *Бер урында сауҙагәрҙәр турпыша ҡороп торор, арлы-бирле болғанып, шунда халыҡ йөрөп торор.* Ш. Бабич.

**3.** Болғансыҡҡа (1 мәғ.) әйләнеү. *Болғанып ятҡан һыуға .. таш кеүек атылдым.* К. Кинйәбулатова.

**4.** Ни менәндер аралашыу; буталыу. *Утлыҡсанан ҡойолған бесәндәр һары һыу ҡатыш тиҙәккә болғанып бөткән.* М. Тажи.

**БОЛҒАНЛАУ** *к.* Тегеләй-былай сайҡалыу. *Болғанлап атлау.* ■ *Һыу уртаһында ултырған бакендар шәп ағымда уңлы-һуллы әкрен генә болғанлай.* Ж. Кейекбаев.

**БОЛҒАНЫШЫУ** *к. урт. кар.* **болғаныу** 2. *Таш келәттән өс кеше килеп сыҡты. Уларҙы күреү менән халыҡ тағы болғанышып китте.* М. Тажи.

**БОЛҒАР** *и. тар.* Төрки телдәренең береһендә һөйләшкән боронғо ҡәбилә (Урта Волгала йәшәгән) һәм шул ҡәбиләнең бер кешеһе. *Болғар ханлығы. Болғар ҡомартҡылары. Болғар теле. Болғар халҡы.*

◆ **Болғар көн(е)** йомшаҡ ҡыҙыл күн.

**БОЛҒАРИ** *с.* Болғар нәҫеле. *Болғари кеше.*

**БОЛҒАТМА** *и. диал. кар.* **болғау**[2].

**БОЛҒАТЫЛЫУ** *к. төш. кар.* **болғатыу** 1, 2. *Болғатылған бесән.*

**БОЛҒАТЫУ** *к.* **1.** Бер нәмә менән әйләндереп, аҫтын өҫкә килтереү; бутау. *Ашты болғатыу. Бутҡаны болғатыу.* ■ *[Ат — егеткә:] Балды әсер алдынан ғына бармағың менән бер ҡат болғат* (Әкиәттән)./Бер нәмә менән араһынан йөрөтөп ҡуҙғатыу; болғау. *Утты болғатыу.* ■ *Сейәбикә .. кистән күмеп ҡалдырған ҡуҙын болғатып, өрә-өрә сыуалға ут тоҡандырып ебәрҙе.* Т. Хәйбуллин.

**2.** Бергә ҡушып аралаштырыу; болғап ҡатнаштырыу; болғау. *[Һунарсы:] Мин был ҡуянды ла атам, өйрәк менән ҡуян итен бергә бешерәм, болғатам.* Ш. Бабич./Бесән, һаламға он, көрпә ҡушып аралаштырыу; болғау. *[Ғамир] аттарға .. бесәнде ҡоро көйө түгел, тураn, болғатып бирә башланы.* Б. Бикбай.

**3.** *күсм.* Тыныcһыҙ хәлгә килтереү; болартыу. *Араны болғатыу.* ■ *Генерал Ҡар Петербургҡа, башҡорт старшинаһы Кинйә Арсланов бөтә Башҡортостанға хат ебәреп, халыҡты бик ныҡ болғатты, тип яҙа.* Р. Солтангәрәев.

**БОЛҒАУ**[1] *к.* **1.** Һауала тегеләй-былай һелтәү. *Ҡул болғау. Сыбыртҡыны болғау. Яулыҡ болғау.* ■ *Ел тирмәне елдеү елдәргә ҡанаттарын болғап әйләнә.* Ғ. Амантай.

**2.** Бер нәмә менән әйләндереп, аҫтын өҫкә килтереү; болғатыу, бутау. *Ҡуҙыйкүрпәскә балды ҡойоп биреп торалар, ул бармағы менән болғап ала ла әсеп бөтөрөп тора, ти.* «Ҡуҙыйкүрпәс менән Маянһылыу»./Бер нәмә менән араһынан йөрөтөп ҡуҙғатыу; болғатыу. *Көлдө болғау. Мейесте болғау.*

**3.** Бергә ҡушып аралаштырыу; болғатыу./Бесән, һаламға он көрпә ҡушып аралаштырыу; болғатыу. *Болғап ашатыу.*

◆ **Ҡойроҡ болғау** *кар.* **ҡойроҡ.**

**БОЛҒАУ**[2] *и.* Он, көрпә ҡушып болғатҡан бесән йәки һалам. *Яҙғы һабан алдынан аттарға болғау бирә торғайныҡ.*

**БОЛҒАУЫР** *с.* **1.** Тыныcһыҙ, болғансыҡ. *Юл ауыр, юл болғауыр булһа ла, милләт, әйҙә әле: алда рәхәт ҡәҙерен белмәккә михнәт файҙалы.* Ш. Бабич.

**2.** *кар.* **болғаҡ** 1.

**БОЛҒАУЫС** *и.* **1.** Мейесте болғата торған кәкре башлы тимер; тәртешкә.

**2.** *диал.* Төрлө нәмәне болғата торған яҫы ҡалаҡ.

**БОЛҒАШЫУ** *к. урт. кар.* **болғау**[1]. *Оҙатыусылар менән пароходтағылар яулыҡ болғаша.* Ғ. Хәйри.

**БОЛДАЛАУ** *к. диал.* **1.** *кар.* **ботарлау** 1. *Итте болдалау.*

**2.** *күсм.* Тәләфләү, туҙҙырыу. *Аҡсаны болдалап бөтөү.*

**БОЛДОР**[1] *и. диал. кар.* **күтәрмә**[2]. *Хәйретдин бабай, өйҙә урын тапмай, болдорға сығып ултырҙы.* Ф. Иҫәнғолов.

**БОЛДОР**[2] *окш.* Өйрәк, һуйыр кеүек ҡош осоп киткәндә сыҡҡан тауышты белдергән һүҙ. *Болдор итеп күтәрелеү.*

**БОЛДОРАУ** *к.* Болдор[2] итеү. *Бол, бол өйрәк, бол өйрәк, болдорап осор күлдән һуң* (Ҡобайырҙан).

**БОЛЙОУ** *к. диал.* Бошоноу.

**БОЛҠ** *окш.* Тар муйынлы һауыттан тығылып-тығылып шыйыҡлыҡ аҡҡанда сыҡҡан тауышты белдергән һүҙ.

**БОЛҠ-БОЛҠ** *окш.* Ҡабат-ҡабат болҡ иткән тауышты белдергән һүҙ. *Болҡ-болҡ итеү. Болҡ-болҡ килеү.*

**БОЛҠОЛДАУ** *к.* Болҡ-болҡ итеү, болҡ-болҡ килеү. *Болҡолдоғо сығыу.*

**БОЛОҒОУ** (болоҡ*ғ*) *к. диал.* Бойоғоу.

**БОЛОҠҺОТОУ** *к.* **1.** Борсоп, тыныслыҡты алыу. *Күңелде болоҡһотоу.*

**2.** *эйһ. ф. кар.* **болоҡһоу**[1] 1. *Башта һағышлы ла, борсоулы ла уй-тойғолар ҡайнаша. Һуғыш бит — ирекһеҙҙән болоҡһотоп та ебәрә шулай ҡайһы саҡта.* С. Әлибаев.

**БОЛОҠҺОУ**[1] *к.* **1.** Борсолоп, тыныслыҡты юғалтыу. *Хәтәр йылды иҫкә төшөрөп, йөрәгемде өтөп, бешереп, болоҡһой ҙа тора был күңел: тыныс түгел донъя, һис түгел!* Ә. Әхмәтҡужин.

**2.** *күсм.* Боҙолорға итеү (көнгә ҡарата). *[Зарифа:] Ҡуй йөрөмәгеҙ, көн болоҡһон тора, ямғыр-маҙар аҫтына ҡалыуығыҙ бар.* Б. Бикбай.

**БОЛОҠҺОУ**[2] *с.* **1.** Борсоулы, тынысһыҙ. *Болоҡһоу кеше. Болоҡһоу күңел. Болоҡһоу булыу. Болоҡһоу итеү.* ■ *Мин Әхмәҙулла бабайҙы борсомаҫҡа тырыштым. Болоҡһоу ҙа уйсан да ине ул.* Ә. Вахитов.

**2.** *күсм.* Боҙолорға итеп торған. *Болоҡһоу көн.*

**БОЛОН**[1] *и.* Үлән менән ҡапланған иркен ер. *Болон бесәне. Болон сәскәһе.* ■ *Арҡа ерҙең үлә-*

*не болондарза үҫкән гөл кеүек.* (Халыҡ йырынан).

**БОЛОН** [2] [*рус.* полон] *и. һөйл.* **1.** Хәрби тотҡонлоҡ; әсирлек. *Болон төшөү.* ■ *[Юлдыкай:] Алығыз Ҡарамырзаны болонға! Бикләп ҡуйығыз .. бер йылға!* Х. Ғәбитов.

**2.** Хәрби тотҡондағы кеше; әсир. *Болон булыу. Болон итеү.*

**БОЛОНЛОҠ** *и.* Үләнле иркен ер; болон.

**БОЛОТ** [1] *и.* **1.** Һауала ваҡ һыу тамсыларының йәки боз кристалдырының тупланыуы. *Аҡ болот. Ҡара болот. Өйкөм болот. Шекәрә болот. Ямғыр болото. Ҡар болото.* ■ *Ҡояш байышынан йүгереп сыҡҡан күк болоттар, талғын ғына килеп, .. ауыл өҫтөнә йылы, йомшаҡ ямғыр бөртөктәре һибәләп үтте.* Т. Йәнәби.

**2.** Берәй нәмәнең ваҡ ҡына булып осоп, туҙып күтәрелгән өлөштәре. *Саң болото. Төтөн болото.*

**3.** *күсм.* Солғап алған ауыр хис, тойғо шәүләһе. *Ҡайғы болото.* ■ *Ысын кешенең йөҙөнә һис кенә лә болот сыҡмаҫ .. булырмы? Кеше һис кенә лә ҡыҙмаҫ, янмаҫ, көймәҫ булырмы?* З. Бишева.

**БОЛОТ** [2] *и.* **1.** Диңгеҙҙә йәшәгән күп күҙәнәкле хайуандарҙың түбән тибы.

**2.** Шул хайуандарҙың ҡайһы бер төрөнөң һыуҙы яҡшы һеңдереп, йыуғыс итеп файҙаланылған йомшаҡ, көпшәк һөлдәһе./Шуға оҡшатып резинанан, поролондан эшләнгән көпшәкле, һығылмалы йыуғыс.

**БОЛОТЛАНЫУ** *к. кар.* **болотлау.**

**БОЛОТЛАУ** *к.* Болотлоға әйләнеү, болотло булыу. *Күк болотлап тора. Кисен ҡапыл болотлап ебәрҙе.*

**БОЛОТЛО** *с.* Болот баҫҡан, болот менән ҡапланған (күккә ҡарата). *Күк болотло, ай яҡтыһы бик тонок ҡына төшә.* Һ. Дәүләтшина.

**БОЛОТҺОҘ** *с.* Болот ҡапламаған; аяҙ. *Болотһоҙ күк.*

**БОЛТ** [*рус.*] *и.* Бер осо ҡалпаҡлы, икенсеһе гайка бороп индерә торған һырлы металл стержень.

**БОЛЬНИЦА** [*рус.*] *и.* Ауырыу кешеләрҙе һалып дауалай торған учреждение. *Больницаға һалыу. Больницаға ятыу.*

**БОЛЬШЕВИЗМ** [*рус.*] *и.* Халыҡ-ара эшселәр хәрәкәтендә 20 быуат башында Рәсәйлә барлыҡҡа килеп, яңы типтағы пролетар партияла, В. И. Ленин төҙөгән большевиктар партияһында кәүҙәләнеш тапҡан революцион, эҙмә-эҙлекле марксистик ағым.

**БОЛЬШЕВИК** [*рус.*] *и.* Большевистик партия ағзаһы, большевизм юлындағы кеше; коммунист.

**БОЛЬШЕВИСТИК** *с.* Большевизмға нигеҙле, большевикка хас. *Большевистик тактика.*

**БОЛЪЯЛ** *и.* Тәғәйенле көн. *[Сурагол:] Был дай кешенән ҡыҙ йәлме ни? Әйҙә, хәҙер миңә барайыҡ беҙ. Ҡымыҙ ҙа бар. Шунда һөйләшербеҙ. Болъял ҡуйышырбыҙ.* Ҡ. Даян. *Һиҙмәй ҙә ҡалдым үткәнен өс көнлөк кенә болъялым* (Сеңләүҙән). // *Болъял да көнөм тулды инде, тор тиһәгеҙ ҙә тормайым* (Сеңләүҙән).

**БОЛЪЯУ** *к.* Ваҡытын, көнөн алдан тәғәйенләү.

**БОМБА** [*рус.* ⟨ *фр.*] *и.* Ташлап шартлата торған снаряд. *Атом бомбаһы. Фугас бомбаһы. Бомба ташлау. Бомба шартлау. Бомбаға тотоу.*

**БОМБАРДИРОВЩИК** [*рус.*] *и.* **1.** Дошмандың ерҙәге һәм диңгеҙҙәге ғәскәренә, ҡорал-ҡорамалдарына бомба ташлау өсөн тәғәйенләнгән хәрби самолёт.

**2.** Шул самолёттың лётчигы.

**БОП-** *киҫ.* **Бо-** ижеге менән башланған төп сифат һәм рәүешкә ҡушылып, артыҡлыҡ дәрәжәһе бирә. *Боп-боҙоҡ. Боп-бойоҡ.*

**БОР** [1] [*рус.* ⟨ *лат.*] *и.* Төрлө минерал составына ингән химик элемент.

**БОР** [2] [*рус.* ⟨ *нем.*] *и.* Ҡорос, алмас йәки карборунд баш беркетелгән стержень.

**БОРА** [1] *и. диал.* **1.** Бал әсетеү өсөн игендән яһалған әсетке; ҡур. *Бора балы.*

**2.** *кар.* **төпрә** 1.

**БОРА** [2] *и. диал.* Быҫҡы табы.

**БОРАЙ** *и.* **1.** Бойҙай төрөнән булған бөртөклө ашлыҡ. *Борай баҫыуы. Борай сәсеү.*

**2.** Шул ашлыҡтың орлоғо. *Борай ярмаһы. Борай бутҡаһы.*

**БОРАҠ** [*ғәр.*] *и. миф.* Ожмах аты (тау менгәндә арт аяғы, төшкәндә ал аяғы, йәнәһе, оҙонайып тора, менеп йөрөүгә уңайлы). *Таң былбылым ҡанат та ҡаҡмаған, атланмаған хурым бораҡҡа.* Д. Юлтый.

**БОРАЛҠЫ** [1] *и.* **1.** Атаһынан йәтим ҡалып, әсәһе менән икенсе ауылға күскән йәки кейәүҙән айырылып ҡайтҡан ҡыҙ.

**2.** Ситтән килгән нәҫел-ырыуһыҙ кеше; килмешәк. *[Имай:] Ни нәмәһе шул Сәлимә боралҡының әте менән һөйләшеп тораһың, атай, ҡыу ҙа сығар!* Һ. Дәүләтшина.

● *Боралҡы килһә, боронғоға урын юҡ.* Мәҡәл. *Боралҡы ҡайтһа, илгә бола килтерер.* Мәҡәл.

**БОРАЛҠЫ** [2] *с. диал.* **1.** Йыйыштырылмаған, йыйнаҡһыҙ. *Боралҡы өй.*

**2.** Әҙәпһеҙ, тәртипһеҙ./Әҙәпкә һыймаған, әҙәпһеҙ (һүҙгә ҡарата). *[Таһыл:] Атай, ҡуйсәле! Боралҡы һүҙ һөйләп, соҡонголап, әллә ни нәмәләр аҡтарма!* Х. Ғәбитов.

**БОРАЛЫУ** *к. диал.* Боларыу.

**БОРАМ** [*рус.* паром] *и.* Һыу аша кеше, ылау сығарыу өсөн өҫтөнә таҡта түшәп яһалған ҙур махсус кәмә йәки һал. *Борам арҡаны. Борам ишкәге. Борам кәмәһе. Борам сығыры. Борам төшөрөү. Борамдан сығарыу.* ■ *Һыу ташҡан, борам әле төшмәгән. Нисек итеп сығырға һуң был һыуҙы?* Ҡ. Ибәтуллин.

**БОРАМСЫ** *и.* Борам йөрөткән кеше.

**БОРАНДАУ** *к. диал.* Борғоланыу.

**БОРҒАҠ** [1] *и.* Шыйыҡлыҡты тар муйынлы һауытҡа ҡойоу өсөн ҡулланылған киң ауыҙлы, тар төпле ҡулайлама; буранка. *Борғаҡ менән ҡойоу.*

**БОРҒАҠ** [2] *и. кар.* **морондоҡ** [1] 2. *Борғаҡ кейҙереү.*

◆ **Борғаҡ кейеү** асыуланып һөйләшмәй ултырыу.

**БОРҒАҠ** [3] *и. диал. кар.* **боҙлауыҡ** 1.

**БОРҒАҠ** [4] *с. диал.* Ҡыҙыу, ҡыҙмалы. *Ул бик борғаҡ кеше.*

**БОРҒАҠЛАУ** *к. ҡар.* **морондоҡлау.** *Быҙауҙы борғаҡлау.*

**БОРҒАЛАНЫУ** *к. ҡар.* **борғоланыу.**

**БОРҒАНАҠ** *и. диал. ҡар.* **боҙлауыҡ** 1.

**БОРҒАНЛАҠ** *с.* Борғанлап, ҡыланып тороусан. *Борғанлаҡ кеше.*

**БОРҒАНЛАУ** *к.* **1.** Ҡалай булырға белмәй, төрлөсә ҡыланыу; борғоланыу.

**2.** Күҙҙе, башты уйнатып, төрлөсә ҡыланыу; ҡыйшанлау.

**БОРҒО** [1] *и.* Көслө, сағыу тауышлы, баҫмаҡһыҙ тынлы музыка ҡоралы. *Еҙ борғо. Мөгөҙ борғо. Борғо ҡыҫҡыртыу.* ■ *Лагерҙа дәртле итеп борғо уйнайҙар.* Ф. Иҫәнғолов.

**БОРҒО** [2] *и. диал.* Бырау.

**БОРҒОЛАНЫУ** *к.* **1.** Тегеләй-былай әйләнеү, төрлө яҡҡа боролоу. *Бейек тауҙар араһынан сығып, далаларҙа борғоланып-борғоланып .. аҡҡан Ырғыҙ йылғаһы, Байсура тауҙың итәгенән әйләнә лә тағы әллә ҡайҙарға ағып китә.* Һ. Дәүләтшина.

**2.** Ҡалай булырға белмәй, төрлөсә ҡыланыу; борғанлау. *Төрлөсә борғоланып, аҡланырға тырышыу.*

**БОРҒОЛАУ** *к.* Тегеләй-былай бороу; ҡабат-ҡабат бороу. *Башты борғолау.* ■ *Командир прицелды борғолап, пушканы «тигр» ҙарҙың береһенә төҙәй.* Ғ. Аллаяров.

**БОРҒОС** *и.* **1.** Механизмды бороп хәрәкәткә килтерә торған ҡулайлама. *Сәғәт борғосо. Борғосло уйынсыҡ.*

**2.** Бормалы ҡапҡас.

**3.** *диал. ҡар.* **борғоса** 1.

**БОРҒОСА** *и.* **1.** Һуҡҡан киндер, балаҫты урай бара торған ағас.

**2.** Йөктөң арҡанын бороп нығыта торған таяҡ.

**БОРҒОСЛАУ** *к.* Тегеләй-былай бороу, ҡабат-ҡабат бороу. *Егет трактор аҫтына салҡан төшөп ятып, ниҙелер борғослай ине.* Н. Мусин.

**БОРҒОСО** *и.* Борғо уйнатыусы.

**БОРДЮ́Р** [*рус.* ‹ *фр.*] *и.* Ниҙе лә булһа, ситтән һыҙып, кәртәләп ҡуйған тирәс. *Газон бордюры. Обой бордюры. Тротуар бордюры.*

**БОРЖО́М** [*рус.* боржоми ‹ *груз.*] *и.* Шифалы минераль һыуҙың исеме.

**БОРҠ** *окш.* Ҡапыл бөркөлөп, туҙып киткәндә белдергән һүҙ. *Саң борҡ итеп ҡалды.*

**БОРҠАҠ** *с.* Туҙып, осоп барыусан. *Борҡаҡ йөн. Борҡаҡ саң.*

**БОРҠАН** [*гәр.*] *и.* Буддизмдағы иң юғары изгелек кимәленә күтәрелгән бәндә; будда.

**БОРҠ-БОРҠ, борҡ та борҡ** *окш.* Ҡабат-ҡабат борҡ иткәндә белдергән һүҙ. *Борҡ-борҡ итеү.*

**БОРҠОЛДАҠ** [1] *и. диал.* **һаңғырау бәшмәк (*ҡар.* бәшмәк).**

**БОРҠОЛДАҠ** [2] *и. диал. ҡар.* **дөмбөр** [1] 1.

**БОРҠОЛДАТЫУ** *к.* Борҡ-борҡ килтереү, борҡ-борҡ итеү. *Борҡолдатып он илеү.* ■ *Арбалар, өсәрләп теҙелгән атлылар, яңғыҙ һыбайҙар ауылдың күпөлдән ятҡан саңлы тәрән юлын борҡолдата-борҡолдата урамға тулып китте.* Һ. Дәүләтшина.

**БОРҠОЛДАУ** *к.* Борҡ-борҡ итеү, борҡ-борҡ килеү. *Борҡолдоғо сығыу. Борҡолдап ятҡан саң.*

**БОРҠОЛОУ** *к. төш. ҡар.* **борҡоу.**

**БОРҠОН** *и.* Ҡуҙаҡлылар ғаиләһенә ҡараған, мал аҙығы өсөн үҫтерелә торған, баллы ваҡ ҡына һары йәки аҡ сәскәле үлән; донник.

**БОРҠОРАТЫУ** *к.* Ҡуйы итеп бөркөү; боҫратыу. *Салиха .. самауырҙың боҫон борҡоратып өйгә алып инеп китте.* Ж. Кейекбаев.

**БОРҠОРАУ** *к.* Ҡуйы булып бөркөлөү; боҫрау. *Самауыр боҫо борҡорап ҡайнап ултыра.*

**БОРҠОТОУ** *к.* **1.** Борҡ итеп осороу, ҡуйы итеп бөркөү. *Йөн борҡотоу. Саң борҡотоу.* ■ *[Айыу] ҡар борҡотоп, Сәхи ҡартҡа ташланған.* Н. Мусин.

**2.** Көслө итеп аңҡытыу. *Хушбый еҫтәре борҡотоу.*

**БОРҠОУ** *к.* **1.** Борҡ итеп осоу, ҡуйы булып бөркөлөү. *Заводтарҙың оҙон мөрйәләренән борҡоп сыҡҡан ҡара төтөндәр болоттарға барып тоташҡандай күренә.* Ф. Рәхимғолова.

**2.** Бик ныҡ аңҡыу. *Кейеменән бензин еҫе борҡоп тора.*

**БОРЛАТЫУ** *к.* Ҡуйы, күп итеп бөркөү; борҡотоу.

**БОРЛАУ** *к.* Ҡуйы, күп булып бөркөлөү; борҡоу. *Мөрйәнән төтөн борлай.* ■ *Әсәйем самауыр килтереп ултыртҡан. Ул борлап ҡайнап ултыра.* Д. Юлтый. *Батыр, кәһәрләнеп, Дроздовтың сикәһенә һуҡты. Танауынан борлап ҡан китте.* Н. Иҙелбай.

**БОРЛОҒОУ** (борлоҡ*ғ*) *к. диал.* **1.** Ишелеү, боролоу. *Борлоғоп үҫкән ағас.*

**2.** *ҡар.* **кимәлйеү** 1. *Аяғы борлоҡҡан.*

**БОРМА** [1] *и. ҡар.* **боролма.** *[Оҡоп] ҡайһы урында төп-төҙгә тура килә, ҡайһы урында бормалары бик йыш.* А. Таһиров. *Борма, борма һайын боролма ир-егеттәр үткән юл булыр.* «Аҡбуҙат».

**БОРМА** [2] *с.* **1.** Боролоп киткән, бормалы. *Борма юл.*

**2.** Ишеп, бороп эшләнгән. *Борма беләҙек.*

**БОРМАЛАНЫУ** *к.* Бормалы булыу. *Үркәсләнеп ҡалҡҡан тауҙарҙан бормаланып төшә шишмәләр.* А. Игебаев.

**БОРМАЛЫ** *с.* **1.** Боролоп-боролоп киткән. *Бормалы юл.*

**2.** Бороп ҡуймалы. *Бормалы ҡапҡас.*

**БОРМАС** [1] *и.* Шешә тығынын аса торған бормалы беҙ.

**БОРМАС** [2] *ҡар.* **бормалы** 1. *Бормас юл. Бормас-бормас булыу.*

**БОРМАСА** *и.* Бороп ябыла торған ҡапҡаслы бәләкәй һауыт. *Фәйзрахман ағай бормасалағы майын табын уртаһына ҡуйҙы.* Н. Мусин.

**БОРМАСЛАНЫУ** *к. ҡар.* **бормаланыу.**

**БОРМАШИ́НА** [*рус.*] *и.* Борҙы (*ҡар.* **бор** [2]) хәрәкәткә килтерә торған теш дауалау аппараты.

**БОРОЗ** *и. диал.* Бөрөз.

**БОРОЛДАТЫУ** *к.* Атлыҡтырып, күп итеп сығарыу (боҫ, төтөн кеүек нәмәне).

**БОРОЛДАУ** *к.* **1.** Атлығып, күп булып сығыу (боҫ, төтөн кеүек нәмәгә ҡарата).

**2.** *кусм. диал.* Асыуланып, пыр туҙыу. *Боролдоғо сығыу. Бушҡа боролдап йөрөмә.*

**БОРОЛМА** *и.* Һыуҙың, юлдың боролған урыны; бөгөл. *Мин .. пароходты боролмаға инеп юғалтҡанса ҡарап ҡалдым.* Я. Вәлиев.

**БОРОЛОУ** *к.* **1.** *төш. кар.* **бороу** 1. *Сирак боролган аркан. Һемәгә боролган самауыр.*

**2.** Башты, кәүҙәне бороу; әйләнеү. *Боролоп ултырыу. Артка боролоу.* ■ *Арттан кемдер кыскырҙы. Януҙак карт тауыш килгән якка боролоп караны.* М. Тажи.

**3.** Йүнәлеште ҡырҡа үҙгәртеү.— *Могайын, был ауылга гәскәр инмәгәндер, унда аҙык табырбыҙ. Әйҙәгеҙ шунда боролабыҙ,— тинек.* Д. Юлтый./*күсм.* Икенсе бер йүнәлеш, үҫеш алыу. *Ауыл колхозга боролдо.* Б. Бикбай.

**БОРОЛОШ**[1] *и.* **1.** *кар.* **боролма.** *Ылауҙар юлдың боролошона инеп югалды.* Н. Мусин.

**2.** *күсм.* Ниҙеңдер үҫешендәге тулы үҙгәреш; һынылыш.

**БОРОЛОШ**[2] *с. диал. кар.* **борош**[1].

**БОРОМ** *и. диал.* Дүрт шөйтө күҙе.

**БОРОМҠА** *и. диал.* Моҙға.

**БОРОН** *р.* **1.** Бик элек; әүәле. *Борон заманда.* ■ *Йокас олатай! .. Борон, йәш сактарҙа, былай булмаганһындыр бит?* Ғ. Дәүләтшин. *Был ерҙә гүмер кисергән атай-бабайҙар борон.* Р. Ниғмәти.

**2.** Беренсе башлап; алдан, элек. *Батыры Таңгауырҙың борон килде, халык уга югарынан урын бирҙе.* «Бабсаҡ менән Күсәк».

**3.** *бәйл. мәг.* Сығанаҡ килештәге һүҙҙәр йәки *-гмаҫ* формалы сифат ҡылымдан һуң килеп, эш, хәрәкәттең кемдән, нимәнән йәки ниндәйҙер эш, хәлдән алда булғанын белдерә; элек. *Агайҙан борон тороу. Унан борон килеү.* ■ *Тынынды ла сыгараһы булма, яп-якын килеп етмәҫ борон,— ти, Самат миңә.* Ә. Чаныш. *[Байгужа:] Таң яктыртмаҫ борон барып килергә кәрәк.* Д. Юлтый.

♦ **Көн борон** *диал.* ваҡытынан элек; көн элек (*кар.* **көн**[1]).

● *Туйга барһаң, борон бар; борон барһаң, урын бар.* Әйтем.

**БОРОНҒО** *с.* **1.** Бик күптән йәшәп килгән, борон замандан һаҡланған; әүәлге. *Боронго йолалар. Боронго кульъяҙма.*

**2.** Борон булған, борон йәшәгән. *Боронго кешеләр.* ■ *[Хасбулат:] Тегендә, урманда боронго йәйләү урынында, хәҙер беҙҙең колхоздың бик шәп умарталыгы бар.* З. Биишева.

♦ **Боронғо тарих** хәҙерге эраның бишенсе быуаты менән шартлы рәүештә сикләнгән тарих дәүере. **Боронғо телдәр** латин һәм боронғо грек телдәре.

**БОРОНҒОЛАР** *и.* Боронғо кешеләр, ата-баба. *Боронголар һүҙе.* ■ *Әйт тиһәгеҙ әйтәйем, тыңлагыҙ һеҙ, йәмәгәт, минең әйткән һүҙҙәрем боронголарҙан аманат* (Ҡобайырҙан).

**БОРОНДАН** *р.* Бик электән, әүәлдән. *Борондан калган йола.* ■ *— Ул Трофим борондан да һаранырак кеше лә ул. Анау бер йылды минең бер һум кырк тинде күрәләтә йотоп китте бит!* Һ. Дәүләтшина.

**БОРОНДОҠ** *и. кар.* **әлгәнйәк.**

**БОРОС** [*рус.*] *и.* **1.** Тропик үҫемлек һәм шул үҫемлектең әсе орлоғо. *Ҡара борос. Ашка бороҫ һалыу.*

**2.** Ҡырҡыу тәмле йәшелсә һәм уның ҡуҙаҡлы орлоғо. *Болгар бороcо. Ҡыҙыл борос.*

**3.** Шул үҫемлектәрҙең орлоғонан йәки ҡуҙағынан ашты тәмләү өсөн онтағы. *Ашка борос һибеү.*

♦ **Сүл боросо** *бот.* ике өлөшлөләр ғаиләһенә ҡараған йыуан итләс һабаҡлы, һутлы япраҡлы, ҡыҙыл йәки аҡ баш сәскәле үҫемлек. **Сысҡан боросо** *бот.* ҡуҙаҡлылар ғаиләһенә ҡараған ҡыйғас-ҡыйғас селтәр япраҡлы, алһыу йәки аҡ төҫтәге сатыр сәскәле, ҡуҙаҡлы үлән.

**БОРОСЛАНЫУ** *к. төш. кар.* **борослау.** *Аш әҙ боросланган.*

**БОРОСЛАУ** *к.* Борослo итеү; борос һалыу. *Ашты борослау.*

**БОРОСТОҠ** *с. диал.* Бәләкәй генә, әҙ генә. *Боросток бала. Боросток кына май.*

**БОРОУ**[1] *к.* **1.** Бер урында өйрөлтөү; әйләндереү. *Самауырҙың моронон бороу. Аскысты бороу. Бороп индереү. Бороп сыгарыу.* ■ *Сынбулат таш келәттең ишегендәге ҙур быгау йоҙакты шатыр-шотор бора башла[ны].* М. Тажи.

**2.** Бер урында әйләндереп икенсе тарафҡа ҡаратыу. *Кәүҙәне бороу. Өҫтәлде бороп ултыртыу.* ■ *Сәмрегош башын уңга борһа, Акъял батыр уга баркылдак һогондора, һулга борһа — тургай һогондора, ти* (Әкиәттән)./Барған йүнәлешен ҡырҡа үҙгәртеү. *Атты бороу. Машинаны бороу.* ■ *Бара торгас, Зөләйха: «Килеп еттек»,— тине лә бер капкага бороп алып инеп китте.* Т. Йәнәби./*күсм.* Ниҙе лә булһа башҡа йүнәлешкә күсереү. *Игтибарҙы бороу. Һүҙҙе икенсегә бороу.* ■ *Колхозды һыйыр малы аҫраугa һәм йәшелсәлеккә борорга кәрәк.* «Совет Башҡортостаны», 1968, 1 март.

**3.** Өйрөлтөп ауырттырыу. *Ҡолакты бороу. Ҡулды бороу.*

**4.** Әләктереп бер урында өйрөлтөп, тарттырыу. *Йөктөң арканын бороу. Сәгәтте бороу. Уйынсык машинаны бороу.*

**5.** Оҙон, тарау нәмәне уралтыу; сиралтыу. *Аркан бороу. Мыйык бороу.* ■ *Ошо кыска аркандарга егелгән аттар һугышта ҙур-ҙур пушкаларҙы һөйрәп йөрөй икән, тигән хәбәр ишеткәнем бар. Шуга күрә бик тәпейләп, өс тынын да тигеҙ итеп борорга тырышам.* Н. Мусин.

**6.** *диал. кар.* **айыртыу 1.** *Бал бороу. Һөт бороу.*

**БОРОУ**[2] *с. диал. кар.* **ураү**[2]. *Бороу юл.*

**БОРОШ**[1] *с.* **1.** Бер урында боролоп әйләнгән. *Ҡайышы борош итеп быуылган.*

**2.** Боролоп үҫкән. *Борош агас.*

**БОРОШ**[2] *и.* Түбән ауыҙлы, һорғолт һыртлы, асыҡ төҫтәге ҡабырғалы йылтыр йылға балығы.

**БОРСАЙЫУ** *к. диал.* Төксәйеү. *Борсайып карау.*

**БОРСАҠ**[1] *и.* **1.** Ҡуҙаҡлылар ғаиләһенә ҡараған, баҡсала йәки яланда үҫтерелә торған, түңәрәк орлоҡло бер йыллыҡ үҫемлек. *Борсак сәсеү. Борсак сабыу.*

**2.** Шул үҫемлектең ашай торған орлоғо. *Ҡарсык .. алъяпкысынан йәшел куҙаклы борсак сыгарҙы.* С. Агиш.

**3.** Ҡайһы бер ботаник атамалар эсенә инә. **Ат борҫағы** *кар.* **ҡара борсаҡ. Бесәй борсағы** аҡ йәки ҡыҙғылт сәскәле һиҙәп орлоҡло бер йәки күп йыллыҡ үлән. **Борсаҡ ағасы** *диал.* бохар селеге (*кар.* **селек**). **Бохар борсағы** көньяҡта үҫте-

релә торған оҙон һабаҡлы, аҡһыл һары йәки ҡыҙғылт күк сәскәле оҙонсараҡ орлоҡло үҫемлек. **Йылан борсағы** күгелйем генә ваҡ орлоҡло ҡуҙаҡлы үлән. **Йылҡы борсағы** ваҡ теҙмә япраҡлы, алһыу, аҡ төҫтәге ваҡ өлпө сәскәле, бәләкәй ҡуҙаҡлы үлән. **Ҡаҙ борсағы** аҡ ҡына йылтыр борсаҡлы өс асалы урман үләне. **Ҡара борсаҡ** оҙонса ҡыяҡ япраҡлы, аҡ сыбар сәскәле, оҙонсараҡ эре орлоҡло, бейек һабаҡлы үҫемлек; ноҡот борсағы. **Ноҡот борсағы** *кар.* **ноҡот**[1] **1.** **Сысҡан борсағы** ваҡ теҙмә япраҡлы, оҙон үрмә һабаҡлы, өлпө сәскәле ҡуҙаҡлы үлән. **Әсе борсаҡ** бейек төҙ һабаҡлы, ваҡ суҡ япраҡлы, өлпө сәскәле ҡуҙаҡлы үлән.

♦ **Борсаҡ атыу** *кар.* **борсаҡ шыттырыу. Борсаҡ бешереү** уртаҡ һүҙ табыу, килешеү. *Бында йыйын еүеш танауҙар. Улар менән борсаҡ бешерерлек түгел.* Я. Вәлиев. **Борсаҡ бешеү** һүҙ берегеү. *Уның [Хисаметдиндең] ҡыҙҙар менән борсағы бешмәне. Тегеләр, ысынмы, юрамалмы, бик эре сирттерә, хатта йүнләп һөйләшмәй ҙә ине.* Р. Солтангәрәев. **Борсаҡ һиптереү** (*йәки* **ярыу**) маҡтаныу, шапырыныу. **Борсаҡ шыттырыу** шапыртып, арттырып һөйләү. **Таш борсаҡ** *кар.* **таш.**

**БОРСАҠ**[2] *и.* Һауанан бәләкәй генә йомро боҙ рәүешендә яуған яуын. *Борсаҡ яуыу. Игенде борсаҡ һуҡкан.* ■ *Ҡапыл шатыр-шотор йәшен атып ебәрҙе лә шаулатып борсаҡ яуа башланы.* Р. Солтангәрәев.

**БОРСАҠ-БОРСАҠ** *с.* Эре-эре йомро бөртөклө. *Борсаҡ-борсаҡ күҙ йәше. Борсаҡ-борсаҡ тир.*

**БОРСОЛДОРОУ** *к.* **1.** Хафаға һалыу; тынысһыҙлау.

**2.** Мәшәҡәт һалыу; мәшәҡәтләү. *Кешене борсолдороу.*

**БОРСОЛОУ** *к.* **1.** Тыныcһыҙлыҡ күрһәтеү; тыныcһыҙланыу. *Һин йонсорһон тип юлда борсолоп бөттөм бында.* А. Игебаев.

**2.** Мәшәҡәт тыуҙырыу; мәшәҡәтләнеү. *Әнйе .. Айбулатҡа самауыр ҡайнатырға уйлаһа ла Айбулат уға борсолмаҫҡа ҡушты.* Һ. Дәүләтшина.

**БОРСОУ**[1] *к.* **1.** Тынысһыҙланып уйларға мәжбүр итеү; хафаға һалыу. *Тәүҙәрәк яңы шартта эш күләменең тарайыуы Азаматовты бер аҙ борсоғайны. Ләкин эшләй башлағас, был шиктең урынһыҙ булғаны күренде.* Ә. Вәли.

**2.** Мәшәҡәт һалып тынғыһыҙлау; маҙаһыҙлау. *Мин уны бөгөн ҡабат борсомаҫҡа булдым. Сөнки үҙем ныҡ ҡына арыным. Әхмәҙулла бабай ҙа арығандыр, тип уйланым.* Ә. Вахитов.

**БОРСОУ**[2] *и.* Тыныcһыҙлыҡ, мәшәҡәт, хафа. *Борсоуға төшөү. Борсоу һалыу.*

**БОРСОУЛЫ** *с.* Тыныcһыҙлыҡ һалған; хафалы. *Борсоулы ваҡыт. Борсоулы уй.*/Тыныcһыҙлыҡ белдергән; тыныcһыҙ. *Асыҡ тәҙрәнән бер ҡош килеп инде лә әле Таҙҙың, әле ҡатынының ҡолаҡ төбөндә борсоулы тауыш менән һайрай башланы, ти* (Әкиәттән).

**БОРТ** [*рус.* ⟨ *фр.*] *и.* Карап, кәмәнең ҡабырғаһы. *Пароходтың уң яҡ борты.*/Йөк машинаһы һәм йөк вагонының ҡабырғаһы. *Машинаның бортын асҡандар ҙа сәхнә эшләгәндәр һалдаттар.* Ф. Мөхәмәтйәнов.

♦ **Самолёт** (*йәки* **карап**) **бортынан** самолёттан йәки караптан. **Самолёт** (*йәки* **карап**) **бортында** самолётта йәки карапта.

**БОРТАҠ** *с. диал.* Тупһыҙ. *Бортаҡ кеше.* // *Бортаҡ һөйләшеү.*

**БОРХ** *окш. кар.* **борҡ.**

**БОРХОУ** *к. кар.* **борҡоу.**

**БОРҺАЛАНЫУ** *к.* **1.** Теләһә нисек йөрөп, йомарланыу; таушалыу. *Борһаланған кейем.* ■ *Әлегерәк ул шинелде атаһы кейгеләй торғайны ла һуңынан борһаланып йөрөй башлағас, әсәһе: «Торһон, Нурулламдың төҫө булып торһон»,— тине лә түрҙәге мөйөшкә элеп ҡуйҙы.* Ш. Насыров. *Ағай кеҫәһенән борһаланып бөткән бер ҡағыҙ сығарып Бибинурға тоттторҙо.* С. Агиш.

**2.** Тегеләй-былай әйләнеп, ни эсендәлер буталыу. *Ҡарҙа борһалана торғас, Ғарифтың аяғы төйөрөмөрәк нәмәгә тейеп ҡалғандай булды.* Б. Бикбай./Тегеләй-былай аунау. *Арсланов .. бөгөн дә тиҙ генә йоҡоға китә алмаҫын, борһаланып ятырын һиҙеп, кейенә башланы.* Д. Исламов.

**БОРҺАЛАУ** *к.* **1.** Теләһә нисек итеп йомарлау; таушалдырыу. *Кейемде борһалап бөтөрөү.* ■ *Ҡайһы берәүҙәр яңы салбар, итектәр ҙе һыулап, баткаҡҡа буяп, борһалап, иҫке төҫ бирергә тырыша.* Д. Юлтый. *[Сәғит] газетаны борһаланы ла ботинкаһын һөртөп ташланы.* А. Таһиров.

**2.** Тегеләй-былай әйләндереп, ни эсендәлер аунатыу. *Ҡарҙа борһалау.*

**БОРШАЙЫУ** *к. диал.* Ҡыйшайыу (ауыҙға ҡарата).

**БОРШАНЛАТЫУ** *к.* Тегеләй-былай борғолау (кәүҙәне, башты). *Шамсун оҙон кәүҙәһен боршанлата биреберәк атлап китте.* Н. Мусин.

**БОРШАНЛАУ** *к.* **1.** Кәүҙәне тегеләй-былай борғолау. *Теҙгенде бушатып, тыныс ҡына ултырһаң, ат һис бер боршанламай.* И. Кәҫәпҡол.

**2.** *күсм.* Ҡыланып, кәүҙәне, башты ҡыйшаңлатыу; ҡыйшаң-мыйшаң итеү. *Дилә иркәләнеп, аҙырак боршанланы ла, әсәһенең сәй ҡойғанын көттө.* Һ. Дәүләтшина.

**БОРЩ** [*рус.*] *и.* Сөгөлдөр, кәбеҫтә һәм бүтән йәшелсә һалып бешергән аш. *Борщ бешереү.*

**БОСҠАЙ** *и. диал.* Босҡаҡ.

**БОСҠАҠ** *и.* **1.** Малдың енсек тиреһе.

**2.** Бер нәмәнең бәләкәй киҫәге. *Кейеҙ босҡағы. Ҡағыҙ босҡағы.* ■ *Аҫтымда бер брезент босҡағы бар ине. Шуны яй ғына тартып алып, алдыма яптым.* Ф. Иҫәнғолов.

**БОСҠАҠ-БОСҠАҠ** *с.* Бәләкәй-бәләкәй киҫәк рәүешендәге. *Босҡаҡ-босҡаҡ туғайлыҡ.*

**БОСҠАҠЛАУ** *к.* Босҡаҡлы итеү; босҡаҡ (1 мәғ.) ҡуйыу. *Саңғыны босҡаҡлау.*

**БОСОҠ**[1]. *и.* Килешмәгән, ғәйеп эш, ҡылыҡ.

● *Үҙ босоғон күрмәй, кеше босоғон ҡуймай.* Мәҡәл.

**БОСОҠ**[2] *и.* **1.** Бәләкәй күнәсек; май күнәсеге.

**2.** *күсм.* Бәләкәй буйлы кеше.

♦ **Босоҡ танау** төймә кеүек бәләкәй танау.

**БОСОНО́ЖКА** [*рус.*] *и.* Асыҡ-тишек тирәсле йәйге аяҡ кейеме. *Босоножка кейеү.*

**БОСТАН** [*фарс.*] *и.* **1.** Баҡса. *Бостанһыҙ былбыл тағы һайрай алмаҫ.* Аҡмулла.

2. *(баш хәреф менән)* Ҡатын-ҡыҙ исеме.

● *Бостан байлыҡ, бер айлыҡ.* Мәҡәл.

**БОСТОҠ** *и. ҡар.* **остоҡ.**

**БОСТО́Н** [*рус.*] *и.* Юғары сифатлы йөн туҡыма. // *Бостон костюм.*

**БОҪ** *и.* **1.** Газ хәленә килгән шыйыҡлыҡ; быу, пар. *Аш боҫо. Боҫ борҡорау.* ■ *Суйын ҡаҙандарҙың ауыр ҡапҡастары асылыу менән .. бешкән аштың боҫо күтәрелеп, тирә-яҡҡа таралды.* М. Тажи.

**2.** Йылы һауа менән һыуыҡ һауа аралашҡанда барлыҡҡа килгән ҡуйы аҡ томан. *Заһитҡа әйәреп тыштан ингән һалҡын һауа боҫ булып иҙәнгә йәйелде.* С. Агиш.

**3.** *ҡар.* **быу** 2.

**БОҪАРЫУ** *ҡ. диал. ҡар.* **быуланыу** 3.

**БОҪҠОН** и. **1.** Йәшерен урынлашҡан һаҡ, йәшерен ҡарауыл. *Беҙ уҡтарҙы янға ҡуйып, тал араһында боҫҡонда ятабыҙ.* Ғ. Ибраһимов.

**2.** Шул ҡарауылдағы кеше. *Бәҙергоп тиҙ арала Һатҡынан килер берләм юлға төп көсөн тупланы. Һөжүм өсөн ике яҡтан Нарыл тауҙың ҡая таштары аҫылынып торған бер ҡыҫыҡты һайланы. Арыраҡ боҫҡондар ҡуйырға ниәтләгәйне, ләкин өлгөрә алмай ҡалды.* Ғ. Хөсәйенов.

**БОҪҠОУ** *ҡ. диал. ҡар.* **боҫрау** 1.

**БОҪЛАМА** *и.* Ауыртҡан, һыуыҡ тейгән ергә боҫлап, баҫырып һалған сепрәк; компресс. *Боҫлама һалыу.*

**БОҪЛАНЫУ** *ҡ.* **1.** Боҫлоға әйләнеү, боҫ менән ҡапланыу, боҫҡа солғаныу. *Ҡайнап ултырған аштан бүлмә боҫланды.* ■ *Трофимов боҫланған күҙлеген һөртә-һөртә тәҙрә тәҫгәленә барып баҫты.* Я. Хамматов.

**2.** Боҫҡа әүерелеү. *Боҫланып осоу.*

**БОҪЛОҠ** *и.* Самауыр, сәйгүн ҡапҡасындағы боҫ сыға торған тишек. *Ут яғылған. Уның өҫтөндәге тимер өстағанда ҙур баҡыр сәйгүн боҫлоғонан быу ҡатыш һыу сәсрәтеп ҡайнай.* И. Көсәпҡол.

**БОҪОУ** *ҡ.* **1.** Башты, кәүҙәне аҫҡа баҫып, йәшенеү. *Боҫоп тороу. Боҫоп ултырыу.* ■ *Боҫоп та ғына ятҡан ай ҡуянды өшкөтөп ҡасырҙы Юлготто* (Халыҡ йырынан).

**2.** *ҡусм.* Шым булып, ситтә ҡалыу; ҡасыу. *Күрәштәрҙән боҫҡан ҡорбанһыҙҙар юл бирһендәр көслө ҡулдарға.* Д. Юлтый.

**БОҪРАУ** *ҡ.* **1.** Боҫ сығарыу, боҫ борҡотоу. *Боҫрап ултырған аш.* ■ *Шылтырап торған күмерҙең эше тиҙ инде — самауыр боҫрап ҡайнап та сыҡты.* Ғ. Ибраһимов.

**2.** *диал.* Быуланыу.

**БОҪТОРОУ** *ҡ. йөкм. ҡар.* **боҫоу.**

● *Аш хурлама — ҡоҫторор, ир хурлама — боҫторор.* Мәҡәл.

**БОТ** [1] *и.* **1.** Аяҡтың тубыҡтан юғарғы өлөшө. *Бот ите. Бот төбө. Бот һөйәге.*

**2.** *ҡар.* **аяҡ** [1]. *Мейес бото. Ултырғыс бото.*

♦ **Бот буйы** бәләкәй генә (бала кешегә ҡарата әйтелә). **Бот күтәреп ятыу** эшһеҙ ятыу. *Унан [һуғыштан] кем файҙа итә? Әлбиттә өйөндә бот күтәреп, түбәгә төкөрөп ятҡан байҙар файҙа итә.* Д. Юлтый. **Бот сабыу** ныҡ ғәжәпләнеп, ярһып ботҡа һуғыу. *Бот сабып көлөү.* ■ *— Бәрәмәс, быуна һиңә кәрәк булһа! — тине Илбай ҡарт, бот сабып.* Х. Ғиләжев. **Тараҡан** (*йәки* **эт**) **бото кеүек** *ҡар.* **тараҡан.**

**БОТ** [2] [*рус.* пуд] *и.* Ун алты килограмм самаһына тиң булған ауырлыҡ үлсәү берәмеге. *Бер бот бал. Ике бот он.* ■ *Аҡназар ағайҙар үткән йылдарҙа ни саҡлы тырышһа ла йыйған игендәре утыҙ-ҡырҡ боттан артмай торғайны.* Ғ. Дәүләтшин.

♦ **Бото бер тин** *ҡар.* **тин.**

**БОТ** [3] *и.* Мәжүсиҙәр табына торған һын. *Ботҡа табыныу.*

**БОТАЙ-САТАЙ** *с. диал. ҡар.* **сатай-ботай** 2.

**БОТАҠ** *и.* **1.** Үҫемлек һабағынан сыҡҡан үҫенде. *Ағас ботағы. Ботаҡҡа элеү.*

**2.** *диал. ҡар.* **тамыр** 3.

♦ **Ен ботағы** *ҡар.* **ен.**

**БОТАҠЛАНЫУ** *ҡ.* Ботаҡ ебәреү.

**БОТАҠ-САТАҠ** *и. йыйн.* Һынған, ҡырҡылған ваҡ ағас. *[Солтанов] ныҡ кеше, ботаҡ-сатаҡты шарт-шорт һындыра баҫып килә.* Н. Мусин.

**БОТАЛЫУ** *ҡ. төш. ҡар.* **ботау** [1].

**БОТАМА** *и.* Ерен һөрөү өсөн ағасынан таҙартылған урмандағы урын. *Ботаманы һөрөү.*

**БОТАНДЫ** *и. диал.* Ботама.

**БОТА́НИК** [*рус.*] *и.* Ботаника өлкәһендә эшләгән белгес.

**БОТАНИ́К** *с.* Ботаникаға мөнәсәбәтле. *Ботаник күҙәтеүҙәр.*

**БОТА́НИКА** [*рус.* ⟨ *гр.*] *и.* Үҫемлектәрҙе өйрәнә торған фән. *Ботаника баҡсаһы.*

**БОТАРЛАНЫУ** *ҡ. төш. ҡар.* **ботарлау.**

**БОТАРЛАУ** *ҡ.* **1.** Бот, ҡанатын, һөйәк-һаяғын айырғылау (иттең). *Түшкәне ботарлау. Быуынбыуынынан ботарлау.* / Өҙөп-тартып йолҡҡолау. *Өс көн элек унда бүреләр бер ҡоралайҙы ботарлап ташлаған.* С. Кулибай. *Бүре төлкөнө шунда уҡ ботарлап, өс кенә һоғонған да ҡуйған, ти* (Әкиәттән).

**2.** Айырғылау, һындырғылау. *Дим буйының муйылын бигерәк тә Теуәләй ауылының халҡы ботарлай.* «Совет Башҡортостаны», 1970, 20 март.

**БОТАУ** [1] *ҡ.* **1.** Ҡырҡып ботаҡтан таҙартыу. *[Сәлмән] һыргыйыраҡ ағастарҙы йығып ебәрә лә, ботап, бысып, ярып, өйөп ҡуя, ти* (Әкиәттән).

**2.** Ағастан таҙартыу. *Урман ботау.*

**БОТАУ** [2] *ҡ. диал. ҡар.* **матау** 2.

**БОТИНКА** [*рус.* ботинки ⟨ *фр.*] *и.* Ҡыҫҡа ҡуныслы, баулы, төймәле йәки молниялы аяҡ кейеме. *Йылы ботинка. Күн ботинка. Ҡышҡы ботинка. Коньки ботинкаһы. Саңғы ботинкаһы. Ботинка бауы. Ботинка теле. Ботинка кейеү.*

**БОТЛАП** *р.* Бото-бото менән. *Ботлап өләшеү. Ботлап бүлеү.*

**БОТЛАУ** *ҡ.* Кемдеңдер эш, ҡылығын кеше алдында яҡлау. *Баланы ботлау.* ■ *[Бисәләр:] Һай-һай, Нәгимде ботларға сыҡҡан шәп кеше!* Һ. Дәүләтшина.

**БОТЛОҠ** [1] *и.* Бер бот [2] нәмә һыйышлы һауыт.

**БОТЛОҠ** [2] *и.* Йылҡы малының артҡы бот тирәһенән яһалған һауыт.

**БОТЛОҠ** [3] *и.* Ышлыяның янбаштан ике яҡлап төшкән ҡайыштары.

**БОТОҠ** *р. диал. ҡар.* **бөтөнләй** 1.

**БОТСА** *и. диал. кар.* **ботлоҡ**[2]. *[Хасбулат] борон йәйләүҙә йәшәгәндә, кымыҙ койоп, эйәргә элеп йөрөтә торған тире һауыттарҙан ботса, ҡулса, турһыҡ кеүек нәмәләрҙе .. өҫтәлгә алып һалды.* З. Биишева.

**БОТ-САТ** *и. йыйн.* Бот[1] менән сат тирәһе. *Бот-сатты йыйып ултырыу.*

◆ **Бот-сат килеү** аяҡ-улды тарбанлатыу. *Ул [Тамыр батыр] тора һалып башын һелкеп ебәреүгә Мәскәй әбей бот-сат килеп, стенаға барып бәрелгән* (Әкиәттән).

**БОТЫ** [*рус.* ⟨ *фр.*] *и. кар.* **бутый.**

**БОҺАЛАҠТАЙ** *с. диал.* Ҙур кәүҙәле, уҫлаптай. *Боһалаҡтай бала.*

**БОЦМАН** [*рус.* ⟨ *гол.*] *и.* Диңгеҙ флотында: кесе командирҙар составынан караптың хужалыҡ эштәре командаһына етәкселек иткән кеше.

**БОШАЛАНДЫРЫУ** *к.* **1.** Ныҡ бошондороп, тынысһыҙлау. *Кешене бошаландырыу.*

**2.** *эйһ. ф. кар.* **бошаланыу.** *Кис булһа, йоклатмай, бошаландыра, уйлата.* М. Ғафури.

**БОШАЛАНЫУ** *к.* Ныҡ бошонол, тынысһыҙланыу. *Мин, йоҡлап киткәнсә, [Сәүиәнен] бошаланып, урынында әйләнгеләгәнен, көрһенгәнен ишетеп яттым.* Ф. Исәнғолов.

**БОШАМАНЛАНЫУ** *к. кар.* **бошонҡоланыу.** *Әсәһе улының нисектер баҫылып, бошаманланып китеүен дә уйланы, ахыры. Тиҙерәк кәләш әйттерергә булдылар.* Ғ. Хөсәйенов.

**БОШМАН**[1] *с. диал.* Бошонҡо.

**БОШМАН**[2] *и.* Бер башҡорт ырыуының исеме.

**БОШМАҪ** *с.* Бер нәмәгә лә иҫе китмәгән, көйә белмәгән вайымһыҙ; моңһоҙ. *Бошмаҫ булыу. Бошмаҫ кеше.*

**БОШОҒОУ** (бошоҡ*ғ*) *к. диал.* Бошоноу.

**БОШОНДОРОУ** *к.* Күңелһеҙ уй, тойғоға төшөрөү. *Хәйҙәрҙең бер хаты Сәгиҙәне .. бошондорҙо ла, борсоно ла.* М. Тажи.

**БОШОНҠО** *с.* Күңелһеҙ уй-тойғоло; бойоҡ. *Бошонҡо кеше. Бошонҡо күңел.* ■ *Хасбулат олатай, күрәһең, алыҫ үткәндәрҙе күҙ алдынан үткәреп, оҙаҡ кына тынып торҙо. Шунан: «Йә, әйҙә, дауам иттек»,— тип, бошонҡо ғына төҫ менән һандыҡ янына килде.* З. Биишева. / Күңелһеҙлеккә сумған. *Вокзалдағы йыйаш, бошонҡо тормош ҡапыл йәнләнеп китте. Поезд килгән ине.* Д. Юлтый.

**БОШОНҠОЛАНЫУ** *к.* Бошонҡо хәлгә төшөү.

**БОШОНҠОЛОҠ** *и.* Бошонҡо хәл. *Бошонҡолоҡҡа төшөү.* ■ *Баҫа барған бошонҡолоҡто еңергә тырышып, тиҙерәк яҙырға ултырҙым.* Ф. Исәнғолов.

**БОШОНОУ** *к.* Күңелһеҙ уй, тойғоға бирелеү; күңелһеҙләнеү. *Бошоноп йырлап ултырыу.* ■ *Өйөп киткән утыны тотош көлгә әйләнгән, ти. Әрәм булған утын өсөн бошонған, ти, Сәлмән* (Әкиәттән).

**БОШОРҒОЛАНЫУ** *к.* Тыныслыҡ тапмай, маҙаһыҙланыу; ныҡ бошоноу. *Волков нимә хаҡындалыр уйланып, бошорғоланып ултыра ине.* Х. Зарипов.

**БОШОРОУ** *к.* Күңелһеҙ ауыр тойғоға төшөрөү; бошондороу.

◆ **Эс(те) бошороу** 1) күңелһеҙ, ауыр тойғоға төшөрөү. *Бала булмауы ғына уларҙың [әбей менән бабайҙың] эсен бошороп торған, ти* (Әкиәттән); 2) асыуға тейеү, йәнде көйҙөрөү. *Сөйҙә элеүле торған китек балта өйҙәгеләрҙең эсен бошора башланы.* К. Мәргән.

**БОШОУ** *к.* Күңелһеҙ, ауыр тойғоға төшөү; хәсрәтләнеү, ҡайғырыу. *[Шәрифә:] Бошма, Ғәмиркәйем, тракторға уҡырһың, ҡулыңдан эш килә һинең!* Б. Бикбай. **Эс бошоу** 1) күңелһеҙ, ауыр тойғоға төшөү; яманһыулау. *Шафиҡ саҡ ҡына күренмәйерәк торһа, Миңлекамалдың эсе боша, өйөндә ниҙер етмәгән кеүек тойола.* Я. Хамматов; 2) асыу килеү, йән көйөү.

**БӨБӘЛӘК** *и. диал. кар.* **бөгәләк** 1.

**БӨГӨЛ** *и.* Һыуҙың, юлдың боролған ере; боролма. *Юл бөгөлө.* ■ *Иҙелдең тау итәгенә боролоп ингән бөгөлөндәге кәмәләр яғынан эт өргән тауыш ишетелде.* Ш. Шаһәр.

**БӨГӨЛМӘ** *и. диал.* Бөгөл.

**БӨГӨЛӨП-ҺЫҒЫЛЫУ** *к.* **1.** Бер тегеләй, бер былай бөгөлөү; эйелеп-бөгөлөү. *Бөгөлөп-һығылып көлөү.* ■ *Етеле шәмдең уты елгә бөгөлөп-һығылып ҡыуығын һөрөмләй ҙә аҡрын ғына һулҡылдап яна башлай.* Һ. Дәүләтшина.

**2.** *күсм.* Кемдендер алдында ярамһаҡлыҡ менән эйелгеләү. *Сафа бөгөлөп-һығылып, Гөлнурға: «Һеҙ тигәнсә булыр, борсолмағыҙ»,— тине.* М. Тажи.

**БӨГӨЛӨҮ** *к.* **1.** *төш. кар.* **бөгөү** 4. *Сите бөгөлгән яулыҡ. Ҡайындан бөгөлгән сана табаны.*

**2.** Һығылып, кәкре хәлгә килеү; кәкрәйеү. *Таяҡ бөгөлә. Тимер бөгөлә. Йәш тал яҡшы бөгөлә.*

**3.** Быуын тәңгәленән ҡуҙғалыу. *Аяҡ бөгөлә. Бил ҡатҡан, бөгөлмәй.*

**4.** Ос йәки баш яҡ менән аҫҡа табан иңкәйеү; эйелеү. *Елгә ағас бөгөлә.* ■ *Көләс ҡыҙҙар йылғаларҙан бөгөлөп-бөгөлөп һыу ала* (Халыҡ йырынан). / *күсм.* Ауыр тәьҫиргә сыҙамай бирешеү. *Ҡайғыға бөгөлөү.* ■ *Ирмән тигән аҙамат бөгөлөрмө һағышҡа.* А. Игебаев.

**5.** Тура йүнәлеште үҙгәртеү (һыуға, юлға ҡарата). *Бөгөлөп аҡҡан йылға.*

◆ **Бишкә бөгөлөү** *кар.* **биш. Бөгөлөп төшөү** 1) кәкрәйеп төшөү. *Ҡарлау арҡа үҙәгемә тейеп, һынымды ҡатырҙы. Мин бөгөлдөм дө төштөм, тын алып та булмай.* М. Ғафури; 2) сараһыҙ булып бирешеү. *Ҡайғыларға түҙмәй бөгөлөп төшә имән кеүек көслө егеттәр* (Халыҡ йырынан).

**БӨГӨЛӨШ** *и.* **1.** Тегеләй-былай бөгөлгән хәрәкәт. *Ирҙер бейеүе бер-ике бөгөлөш яһап тыпырлауҙан тора.* К. Мәргән.

**2.** *диал.* Бөгөл.

**БӨГӨМ** *и.* **1.** Бөгөлөп торған урын. *Валдың бөгөмө. Умыртҡалыҡтың бөгөмө.*

**2.** *диал.* Бөгөл.

**БӨГӨН** *р.* Ошо, әлеге көн; был көн. *Бөгөн иртәнсәк. Бөгөн кис. Бөгөн төндә. Бөгөнгә тиклем. Бөгөндән алып.* ■ *Гөлбоҫтан да ни өсөндөр бөгөн бүтән көндәрҙәге кеүек асыҡ, көләс йөҙлө түгел.* Ғ. Дәүләтшин. / Әлеге ваҡыт; хәҙер. *Тыңлаһындар: бында ҡасандыр бер Пушкин күргән телһеҙ башҡорттар беренсе ҡат бөгөн*

*үҙ телендә уның шиғырҙарын уҡыйҙар.* Ғ. Сәләм.

♦ **Бер бөгөн** түгел гел генә, һәр ваҡыт. *[Миңлебай:] Былай этләнеүебеҙ бер бөгөн түгел бит индә.* Т. Йәнәби. **Бөгөн булһын** бөгөн дә, әле лә, һаман да. *Ул хәлдәр бөгөн булһын иҫемдән сыҡмай.* **Бөгөн килеп** ошо көнгә еткәс. *Өндәшмәй йөрөгән дә бөгөн килеп саҡ әйтте.*

**БӨГӨНГӨ** *с.* Был, ошо көнгө. *Бөгөнгө газета. Бөгөнгө көн.* ■ *Тракторҙы сығарҙылар .. Фәхриҙең бөгөнгө уңғанлығы Тимерҙе бик һокландырҙы.* Б. Бикбай. / Хәҙерге ваҡыттағы; хәҙерге. *Бөгөнгө кеше. Бөгөнгө тормош.* ■ *Үҙебеҙҙең бөгөнгө яҙмышты уйлап, Новиковтар менән барасаҡ билдәһеҙ ауыр көндәрҙе иҫкә төшөрөп, күңел нескәрҙе.* Д. Юлтый.

**БӨГӨНГӨЛӘЙ** *р.* Бөгөнгә кеүек. *Юламан ҡарттың бөгөнгөләй хәтерендә: ул көндө лә тап ошондай тымыҡ, томороҡ көн ине.* З. Биишева.

**БӨГӨНГӘ** *р.* Бөгөнгө көн үткәнсә. *Бөгөнгә был эш тороп торһон.*

**БӨГӨН-ИРТӘН** *р.* Ошо көндәрҙә, яҡын арала. *Колхоздар бөгөн-иртән баҫыуға сығырға тора.*

**БӨГӨНЛӨ-ИРТӘЛЕ** *р. диал.* Бөгөн-иртән.

**БӨГӨНЛӨК** *с.* Бөгөнгә етерлек. *Бөгөнлөк утын.*

**БӨГӨҢКӨРӘҮ** *к.* Бөгә иреү, тағы бер аҙ бөгөү. *Ағасты бөгөңкөрәү. Билде бөгөңкөрәү. Туғынды бөгөңкөрәү. Тубыҡты бөгөңкөрәү.*

**БӨГӨҮ** (бөк*г*) *к.* **1.** Төҙҙән кәкре хәлгә килтереү; кәкрәйтеү. *Ағасты бөгөү. Талды бөгөү.* / Кәкре хәлгә килтереп, ниҙер яһау. *Дуға бөгөү. Туғын бөгөү.* ■ *[Шәһит ҡарт] һалабаш сығарып, ҡарама бөгөп урманда ята ине хәҙер.* З. Биишева. *Муйыл ағасынан ул [Талип] ян бөгөп, уҡтар яһап ала сағандан.* Б. Вәлит.

**2.** Быуын тәңгәленән ҡуҙғатыу. *Аяҡты бөгөү. Тубыҡты бөгөү.*

**3.** Ос йәки баш яҡты аҫҡа табан иңкәйтеү; эйеү. *Кәүҙәне бөгөү.* / *күсм.* Ауыр тәьҫир, баҫым, ҡыҫым менән еңеү; бирештереү. *Ауырыу бөктө уны.* ■ *Иллене үткән ҡатын бит. Шулай ҙа бирешмәй килә ине, Миңлегәзизенең ҡайғыһы бөктө.* Р. Солтангәрәев. *Яңғыҙ ирҡәйҙәрҙе донъя бөгә, бергә-бергә ғүмер итәйек* (Халыҡ йырынан).

**4.** Ситен ҡайтарып тегеү. *Итәкте бөгөү.* ■ *Яулыҡ бөгөп, сәскә сигеп, кеҫәмә һалып ҡаса* (Халыҡ йырынан).

**5.** *күсм.* Баш күтәрмәй, ҡомһоҙланып ашау; һыпыртыу. *Юлдан асығып килгән кешеләр бөгә генә билмәнде.* Б. Бикбай.

♦ **Баш(ты) бөгөү** *шул уҡ* **баш эйеү** (*ҡар.* **баш**). **Бил бөгөү** *ҡар.* **бил. Дуға бөгөү** *ҡар.* **дуға.**

● *Ағасты йәш сағында бөк.* Мәҡәл.

**БӨГӘ** *и.* Ашыҡ уйнағанда: ашыҡтың уң ҡабырғаһы менән өҫкә ятыуы.

**БӨГӘҘӘК** *и.* **1.** *иҫк.* Арба өҫтөнә ағастан бөгөп эшләгән ҡыуыш. *Борон башҡорттар барыһы бергә уҡмашып, тирмәһе булғаны тирмә менән, булмағаны бөгәҙәк менән күсеп йөрөгән* (Хикәйәттән).

**2.** *диал. ҡар.* **бөгәзе** 1.

**БӨГӘЗЕ** *и.* **1.** Төрлө кәрәк өсөн ағастан бөгөп йәки бауҙан дуға, түңгәләк рәүешендә эшләнгән нәмә. *Мурҙа бөгәзеһе. Сапғы бөгәзеһе. Балта сарлау өсөн бөгәзе эшләү.*

**2.** *диал. ҡар.* **ҡарама** [2].

**БӨГӘЛ** *и. диал.* Бөгөл.

**БӨГӘЛСӘН** *и. диал.* Бөгәләк.

**БӨГӘЛӘК** *и.* **1.** Йылҡының ҡорһаҡ аҫтына йомортҡа һалып, эсен ҡортлата торған себен. *Үлән ашап йөрөгән аттар бөгәләк тезелдәүенә сыҙай алмай төтәнлек һалған урынға, кешеләр тирәһенә килде.* Я. Хамматов.

**2.** *диал.* Уҡра.

**БӨГӘЛӘКЛӘҮ** *к.* Бөгәләккә сыҙамай тынысһыҙланыу.

**БӨГӘР** *и.* **1.** Тубыҡтың бөгөлгән аҫ яғы. *[Егет] аяғына яңырак сарыҡ кейеп, бөгәр төбөнән бәйләгән.* Ғ. Дәүләтшин.

**2.** *диал.* Терһәктең бөгөлгән эс яғы.

♦ **Бөгәргә һуғыу** *шул уҡ* **бәкәлгә һуғыу** (*ҡар.* **бәкәл**).

**БӨГӘРЛӘНЕҮ** *к.* **1.** Осо, сите эскә ҡайтарылып, төрөлөү. *Ҡайһы бер япраҡтар .. йәшел көйө туңып, бөгәрләнеп ҡала ботағында.* М. Кәрим. / Теләһе нисек бөкләнеү; йомарланыу. *Ҡағыҙ кеҫәлә йөрөп бөгәрләнгән.*

**2.** Түңгәләкләнеп уралыу; йомарланыу. *Бөгәрләнеп ятҡан йылан.* / Аяҡты, башты күкрәккә ҡыҫыу; йомарланыу. *Хоҙайбирҙенең ыштаны юҡ, ҡап-ҡара күлдәк кейгән.. Ике еңен һалындырып, ҡулдарын эскә тығып алған да башын эйеп, бөгәрләнеп ултырған.* М. Ғафури.

**БӨГӘРЛӘҮ** *к.* **1.** Осон, ситен эскә ҡайтарып, төрөү. *Япраҡты бөгәрләү.* / Теләһә нисек ойпалау; йомарлау. *Ул [Рахмай] кеҫәһенә бөгәрләп тыҡҡан галстугын тартып сығарырға маташа.* К. Кинйәбулатова.

**2.** Түңгәләкләп урау; йомарлау.

**БӨГӘРСӘЙ** *и.* Һаҙандар ғаиләһенә ҡараған таҙа, ағын һыу төбөндә йәшәгән бәләкәй балыҡ.

**БӨГӘСӘ** *р.* **1.** Бөгөн төндә. *Бөгәсә буран ойоҡһотоп торҙо.* Ж. Кейекбаев. *[Алма:] Бөгәсә һин керпек тә ҡаҡманың түгелме һуң, ағай?* Ҡ. Ибәтуллин.

**2.** *диал.* Бөгөн. *Бесәнгә бөгәсә генә төштөләр.*

**БӨҘӨР** *и.* Һыу өҫтөндәге ваҡ тулҡын. *Күлдең өҫтөн йырмаслай әрә һыу бөҙөрҙәре.* А. Игебаев.

**БӨҘӨРЛӘНЕҮ** *к.* Бөҙөр менән ҡапланыу. *Һыу өҫтө бөҙөрләнә.*

**БӨҘӨРЛӘҮ** *к.* Бөҙөр менән ҡаплау. *Ел сығып, һыу өҫтөн бөҙөрләй.*

**БӨҘРӘ** *с.* **1.** Түңгәләкләнеп төрөлөп-төрөлөп торған (сәскә ҡарата). / Ҡабарып, уралып торған. *Бөҙрә болот. Бөҙрә төтөн. Бөҙрә тулҡын.*

**2.** Ҡабарып торған ҡуйы япраҡлы. *Бөҙрә тал.* ■ *Ҡарсыға ла кәкүк ай бейектә, бөҙрә генә башлы ерекҡә* (Халыҡ йырынан).

**БӨҘРӘЛӘНЕҮ** *к.* Бөҙрәгә әйләнеү, бөҙрә булыу. *Бөҙрәләнеп торған сәс.* / Ҡабарып уралыу, төрөлөү. *Ҡайһы өйҙән ҡуйы төтөн сыға, бөҙрәләнеп үрелә офоҡҡа.* С. Әлибаев.

**БӨҘРӘЛӘТЕҮ** *к. йөкм. ҡар.* **бөҙрәләү.** *Сәсте бөҙрәләтеү.*

**БӨҘРӘЛӘҮ** *к.* Бөҙрә итеү. *Сәсте бөҙрәләү.*

**БӨЖЛӘҮ** *к. диал.* Шөрләү, ҡурҡыу. *Ҡараңғынан бөжләү.*

**БӨЖМӘН** *с. диал.* Ҡурҡаҡ.

**БӨЖӨМ** *и. диал.* Ҡурҡыу хисе.

**БӨЖӘК** *и.* Быуынтыҡ аяҡлы, умыртҡаһыҙ ваҡ йән эйәһе (мәҫ. себен, үрмәксе). *Файҙалы бөжәктәр.*

**БӨЙЛӘ** [*төрк.*] *р. иҫк. кит.* Шулай. *Бөйлә ғәшрәт менән бер ай миҡдар ҡарарланып, кирегә дүнделәр.* «Башҡорт шәжәрәләре», 1960.

**БӨЙЛӘН** *и.* Бик ныҡ яраланғанда, һуғылғанда ауыртҡанды һиҙмәү хәле; шок. *Бөйлән булыу.*

**БӨЙӨ** *и.* Ерҙе тишеп ојлай торған ағыулы эре үрмәксе.

**БӨЙӨК** *с.* Әһәмиәте, тотҡан урыны бик ҙур; оло. *Бөйөк Октябрь социалистик революцияһы. Беҙҙең бөйөк Ватан.* ■ *Беҙҙә бөйөк бер ғилем бар, ленинизм — ул ғилем. Йылдарҙың иң йыраҡғын да күрһәтә ошо ғилем.* Р. Ниғмәти. / Тиңдәшһеҙ юғары; оло. *Бөйөк аҡыл эйәһе. Бөйөк ғалим. Бөйөк яҙыусы.*

**БӨЙӨКЛӨК** *и.* Әһәмиәте, тотҡан урыны бик ҙур хәл. *Матурлыҡты һөйгән кешеләр бөйөклөктө ныҡыраҡ беләләр; матурлыҡты белгән кешеләр бөйөклөктә янып үләләр.* Д. Юлтый.

**БӨЙӨМ** *с. диал.* Яҡшы тәбиғәтле, йомшаҡ. *Ул бөйөм кеше, бер ҙә асыулана белмәй.* М. Тажи.

**БӨЙӨМҺӨҘ** *с. диал.* Булдыҡһыҙ.

**БӨЙӨР** *и.* **1.** Бәүел айырып сығара торған ҡуш ағза. *Бөйөр шешеү. Уң яҡ бөйөр. Һул яҡ бөйөр.* **Бөйөр ташы** бөйөр эсендә барлыҡҡа килгән таш.

**2.** Кәүҙәнең шул ағза тәңгәлендәге урыны. *Бөйөргә таяныу. Бөйөргә төртөү.* / Кейемдең шул тәңгәлендәге ере. *Еләндең бөйөрөнә өс рәт тәңкә баҫылған.*

**БӨЙӨРГӘН** *и.* Ваҡ киртләс япраҡлы, ваҡ сәскәле һыу үләне.

**БӨЙӨРЛӨК** *и. ҡар.* **бөйөрсә.**

**БӨЙӨРСӘ** *и.* Еләндең бөйөрөнә баҫылған тәңкәле, суҡлы уҡа. *[Кейекбай] ҡатын-ҡыҙға беләҙек, йөҙөк, балдаҡ, ҡаптырма, сулпы, бөйөрсә, яурынса, сәсмәүҙәр һаған* (Әкиәттән).

**БӨЙӨРТӨН** *р.* Бер яҡ ситтәрәк. *Бөйөртөн ятҡан ауыл.* ■ *Ҡаҙаҡ бөйөртөн торған бер йылҡы алдына саба* (Хикәйәттән).

**БӨЙРӘК** [1] *с.* Бөйөрө аҡ тимгелле; бөйөрө аҡ. *Бөйрәк һыйыр.*

**БӨЙРӘК** [2] *и. диал. ҡар.* **бөйөр** 1.

**БӨЙРӘК** [3] *и. диал.* Йәлдәү.

**БӨЙӘН** *и.* **1.** Ашҡаҙандан сыҡҡан нәҙек эсәктең өлөшө.

**2.** *диал.* Тултырма.

**БӨЙӘНӘК** *и. диал. ҡар.* **бөйөр** 1.

**БӨЙӘТ** *и. диал.* Тултырма.

**БӨККӘН** *и.* **1.** Эсенә бер нәмә бөгөп һаған ваҡ бәлеш. *Бәрәңге бөккәне.*

**2.** *диал.* Билмән.

**БӨКЛӘНЕҮ** *к.* **1.** *төш. ҡар.* **бөкләү** 1, 2. *Китаптың бөкләнгән битә.*

**2.** *ҡайт. ҡар.* **бөкләү** 1. *Бөкләнеп бөткән ҡалай.*

**БӨКЛӘҪ** *и. диал.* Бөгөл.

**БӨКЛӘТЕҮ** *к. йөкм. ҡар.* **бөкләү.**

**БӨКЛӘҮ** *к.* **1.** Бөгөп, кирегә ҡайтарыу. *Ҡағыҙҙы бөкләү. Яулыҡты бөкләү.* ■ *[Ҡолморҙа] ҡулындағы ҡамсыһын бөкләп тотҡан.* Т. Хәйбуллин.

**2.** Быуын тәңгәленән кәкрәйтеп, үҙеңә тартыу. *Ҡулды бөкләп ятыу.* ■ *Тамаҡ туйҙырырға ингән кешеләр аяҡ бөкләп ултырған да сәй эсә, һурпа һемерә.* А. Таһиров.

**3.** *диал.* Тәңкләү.

**БӨКӨ** *и.* **1.** Мискә тығыны.

**2.** *диал. ҡар.* **тығын** [1].

**БӨКӨЛ** *билд. а.* **1.** Бөтә. *Бөкөл халыҡ ошонда.*

**2.** *р. мәғ. ҡар.* **бөтөнләй** 2. Бөкөл онотҡанмын.

**БӨКӨЛДӨ** *р. диал. ҡар.* **бөтөнләй** 2.

**БӨКӨС** *с. ҡар.* **бөкрө.** *Бөкөс кеше.*

**БӨКӨСЛӘНЕҮ** *к. ҡар.* **бөкрәйеү.**

**БӨКРӨ** *с.* Арҡаһы сыҡҡан; бөкөс. *Бөкрө кеше.* / *и. мәғ.* Арҡаның сурайып сыҡҡан ере.

**БӨКРӘЙЕҮ** *к.* **1.** Бөкрөгә әйләнеү; бөкрө булыу; бөксәйеү. *Бөкрәйеп ҡалыу. Бөкрәйгән әбей.*

**2.** Алға бөгөлөп, эйелеү. *Бөкрәйеп ултырыу.* ■ *[Ямал:] Урғанда ла бөкрәйеп йөрө, ашағанда ла бөкләнеп ултыр — эшме ни ул.* М. Тажи.

**БӨКРӘЙТЕҮ** *к.* Бөкрө итеү; көмрөйтеү. *Һигеҙ тигәс тә ни яман? Һикһән йәшлек ҡарт инәң, һуҡыр күҙен секрәйтеп, ҡатҡан билен бөкрәйтәп, һыу ташыһа — шул яман* (Ҡобайырҙан). / *күсм.* Хәлде дарманды алыу; бөгөү. *Баштан кискән ауыр ҡайғы — балаларҙы, аталарҙы, туғандарҙы юғалтыу хәсрәте кешеләрҙе бөкрәйткән.* А. Карнай.

**БӨКРӘНЛӘҮ** *к.* **1.** Арҡаны, билде яҙмай, бөкрө хәлдә тотоу; бөксәнләү. *Бөкрәнләп атлыу. Бөкрәнләп йөрөү.*

**2.** *күсм.* Баш күтәрмәй эшләү; бөксәңләү. *Ҡарт атайым яңғыҙы ауылда бөкрәңләп көн күргән була.* Д. Юлтый.

**БӨКСӘЙЕҮ** *к.* **1.** Бөкөскә әйләнеү; бөкрәйеү. *Бөксәйгән кеше.* ■ *Бөксәйеп бөткән бер ҡарсыҡ килеп инде.* Х. Мохтар.

**2.** Алға бөгөлөп, эйелеү; бөкрәйеү. *Ҡуянтубыҡ соҡоп йөрөгән ҡыҙҙарҙың бөксәйгән арыҡ арҡаларын эҫе ҡояш ҡыҙҙыра.* З. Биишева. *Нурислам ағай бүркен .. кейҙе лә бөксәйә биреп сығып китте.* Ф. Иҫәнғолов.

**БӨКСӘЙТЕҮ** *к.* Көмрө итеү; көмрәйтеү, бөкрәйтеү. *Билде бөксәйтеп ултырыу. Бил бөксәйтеп эшләү.*

**БӨКСӘН-БӨКСӘН** *окш.* Бер эйелеп, бер тура бирер йөрөгән хәрәкәтте аңлатҡан һүҙ. *Бөксән-бөксән килеп йөрөү.*

**БӨКСӘНЛӘҮ** *к. ҡар.* **бөкрәнләү.** *Бөксәнләп йөрөү. Бөксәнләп атлау.* ■ *Ҡыҙҙар бөксәнләп ҡуянтубыҡ эҙләй.* З. Биишева. *Ауылдың эшкә яраған кешеләре ҡамыт, дуға, тырма, һабан, арбалар тирәһендә бөксәнләй. Шунда төҙәтеныләр, эшкә әҙерләнәләр.* Ғ. Дәүләтшин.

**БӨКТӨРӨҮ** *к. йөкм. ҡар.* **бөгөү.**

**БӨКШӨРӨҮ** *к. диал. ҡар.* **бөрөү** 4.

**БӨКӘ** *и. диал.* Билмән.

**БӨКӘНЛӘҮ** *к. диал.* Бөкрәнләү.

**БӨЛГӨН** *с.* **1.** Ас-яланғас, ярлы, сараһыҙ (хәлгә ҡарата). *Бөлгөн тормош.*

**2.** *и. мәғ. ҡар.* **бөлгөнлөк.** *Бөлгөнгә ҡалыу.*

**БӨЛГӨНЛӨК** *и.* Ас-яланғас, ярлы, сараһыҙ хәл. *Бөлгөнлөктә йәшәү. Бөлгөнлөккә төшөү.*

■ *Инде беҙҙең колхоздар мул тормошка баҫа. Бар бөлгөнлөк, бар ярлылык беҙҙән ситкә каса.* С. Агиш.

**БӨЛГӨНСӨЛӨК** *и. кар.* **бөлгөнлөк.**

**БӨЛДӨРГӨ** *и.* **1.** Ҡылыс, ҡамсы кеүек нәмәнең ҡулға кейә торған элмәге.

**2.** *диал.* Элмәкле бау.

**БӨЛДӨРГӨС** *с.* Бөлдөрә, бөлгөнлөккә төшөрә торған. *Бөлдөргөс һуғыш.*

**БӨЛДӨРГӘН** *и. диал.* Бөрлөгән.

**БӨЛДӨРӨҮ** *к.* **1.** Бөлгөнлөккә төшөрөү. *Шулай итеп ерҙәрҙе һаттыралар, муйын тиңе бурыска батыралар; ер һатылғас, бурысты түләтәләр, тамам шулай бөлдөрәләр, йөҙәтәләр* (Бәйеттән).

**2.** Насар хәлгә ҡалдырыу; харап итеү. *[Ныязғол:] Ай эттәгенәһе, бынау буран сығып китеп, бөлдөрҙө лә баһа.* Һ. Дәүләтшина. *Игенселек культураһы түбән булғас, уңыш ярлы, был үҙ сиратында малсылыктың аҙык базаһын бөлдөрә.* «Башҡортостан ҡыҙы», 1986, № 1.

**БӨЛӨК** *с. диал.* **1.** Насар, ауыр. *Бөлөк хәл.*

**2.** Бойоҡ, меҫкен. *Бөлөк кеше.*

**БӨЛӨНӨҮ** *к.* **1.** *кар.* **бөлөү** 1.

**2.** Ауыр хәлдән бойоғоп, меҫкенләнеү. *Ҡаза килһә, бөгөлөп төшмәне ул [Тәфтизан] башын эйеп, бөлөнөп барманы.* А. Игебаев.

**БӨЛӨҮ** *к.* **1.** Ас-яланғаслыҡҡа, ярлылыҡҡа ҡалыу, бөлгөнлөккә төшөү. *Хәбибулла бай аптырап тормай, дуҫтарының кәңәшен тыңлап, үҙен бөлгән яһан иғлан итә... Хәйлә менән малдарын һәм өйҙәрен бисәһе исеменә күсереп, банкротлык хурлыгын өҫтөнә ала.* М. Ғафури.

**2.** Насар хәлгә ҡалыу; харап булыу. *Рәхимә .. донъя бөлгәндәй булып ярһыны.* Һ. Дәүләтшина. *Әгәр уның быны иртәгәнән башлап башлап ошо клубтың хужаһы буласағын белһәләр, бөлдөң, әллә ни тип төрттөрөүҙәре бар.* Ғ. Ибраһимов.

**3.** Ҡыйынлыҡҡа, меҫкен хәлгә ҡалыу; бирешеү. *Бөлөп китте шул Әскәпъямал, бер-ике йыл эсендә бигерәк бөлдө. Күҙгә күренеп картайҙы.* Р. Солтангәрәев.

**БӨЛӘҢГЕРТ** *с.* **1.** Ҡараңғылы-яҡтылы, томанлы яҡтылыҡҡа ҡарата; тоноҡ. *Тәҙрәләрҙә етеле шәмдәрҙән төшкән бөләңгерт яктылык емелдәй.* Я. Вәлиев.

**2.** *күсм.* Һиҙелер-һиҙелмәҫ; асыҡ түгел; тоноҡ. *Бала сактың бөләңгерт һүрәттәре.*

**БӨЛӘҢГЕРТЛӘНЕҮ** *к.* Бөләңгерткә әйләнеү, бөләңгерт булыу. *Яҙғы кояшка иҙрәп, тимгел-тимгел бөләңгертләнә башлаған кар яланы.* Ә. Хәкимов.

**БӨЛӘХӘТ** *и. диал. кар.* **бола** 1.

**БӨЛӘХӘТЛӘҮ** *к. диал.* Болартыу.

**БӨП-** *киҫ.* **Бө-** ижеге менән башланған төп сифат һәм рәүешкә ҡушылып, артыҡлыҡ дәрәжәһен бирә. *Бөп-бөтөн. Бөп-бөкрө.*

**БӨРГӨН** *р. һөйл.* Бер көнө.— *Бөргөн, мәсьәләне һис тә сығара алмағас, Рәис эргәһенә инәйемме икән әллә, тип тә уйлағайным һыр биргә килмәне.* Н. Мусин.

**БӨРГӘК** *и.* **1.** Ваҡ ҡына зәңгәр сәскәле, һырмауыҡ орлоҡло үлән.

**2.** Шул үләндең һырып торған ваҡ ҡына йомро орлоғо. *Мәхүп .. итәгенә һырыған бөргәктәрҙе суплэй-суплэй, шыбырлап кына Сәмигегә яуап бирә.* Һ. Дәүләтшина.

**БӨРГӘНӘК** *и. диал. кар.* **дегәнәк** 1.

**БӨРЙӘН** *и.* Бер башҡорт ырыуының исеме.

**БӨРККӨС** *и. кар.* **бөркөүес.**

**БӨРКӨЛДӘҮ** *к. диал.* Гөрпөлдәү.

**БӨРКӨЛӨҮ** *к.* **1.** *төш. кар.* **бөркөү** [1] 1, 2. *Кейемгә хушбый бөркөлгән.*

**2.** Көс менән берәй тишектән атылыу. *Мөрйәнән төтөн бөркөлә. Самауырҙан боҫ бөркөлә.* ■ *Көбәктән шартлап утлы төтөн бөркөлдә.* Я. Хамматов. *Танауынан һылыу боландың ике яҡҡа тыны бөркөлә.* М. Сөндәклә.

**3.** Нык аңҡыу. *Өлгөргән емештәрҙең тәҙрәнән бөркөлөп ингән хуш еҫе тын юлын иркәләй.* Ф. Иҫәнғолов. / *күсм.* Көслө булып таралыу, сәселеү. *Оскон сәсеп торған күҙҙәренән, кыҙҙарҙыкы кеүек купшы йөҙөнән шатлык бөркөлөп тора.* Н. Мусин. *Ишеткәндә моңло курайҙарын йөрәгемдә моңдар бөркөлә.* Ш. Бабич.

**БӨРКӨТ** *и.* **1.** Йылы ит менән туҡлана торған иң эре йыртҡыс ҡош. *Ак яурын бөркөт. Дала бөркөтө. Тау бөркөтө. Бөркөт балаһы. Бөркөт ояһы.* ■ *Бейектә оса коҙгон кош, унан бейек осор ыласын бар. Ыласындан да бейек оса торған кош батшаһы кыйгыр бөркөт бар.* Салауат Юлаев.

**2.** *күсм.* Ҡыйыу, көслө кешегә ҡарата әйтелә. / *эйл. ф.* **бөркөтөм** ир балаға яратып әйтелә. *Бәү, бәү тимен, йокла тимен, ыласыным, бөркөтөм* (Сәңгелдәк йырынан).

**БӨРКӨТӨҮ** *к. йөкм. кар.* **бөркөү** [1]. *Һыу бөркөтөү.*

**БӨРКӨҮ** [1] *к.* **1.** Шыйыҡлыҡты өрөп сәсрәтеү. *Әхмәҙулла бабай курайына һыу бөркөп, зыңкылдатып өрөп алды.* Ә. Вахитов. *Ҡәләмфер ҙә сәйнәп, бөркөм баҙыян Шәүрә килен кейгән еләнгә* (Халыҡ йырынан). / Тишектән төтөн, боҫ һымаҡ нәмәне атылдырыу. *Төтөн бөркөү.* ■ *Ак самауыр быуҙарын бөркөп, өҫтәл өҫтөнә килеп ултырҙы.* Х. Ғиләжев.

**2.** Нык аңҡытыу. *Урман эсе .. танауға дымлы еҫ бөркөп тора.* М. Тажи. / *күсм.* Көслө итеп һиҙҙереү, сәсеү. *Шатлык бөркөп торған йөҙ.* ■ *[Һалдат] алып автоматын кулға, асыу бөркөп дошманга, ант итте тогро булырга.* Ғ. Әмири.

**3.** *күсм.* Күмәк булып бер юлы тышҡа атлығыу; тибеү. *Былтыргы кауландар быйыл яҙ бөркөп сыккан көслө, йәшел бүтәгәләр менән капланa бара.* Д. Юлтый, В. Мортазин.

◆ **Йән бөркөү** *кар.* **йән. Сәскә бөркөү** *кар.* **сәскә. Теш бөркөү** *кар.* **теш** [1].

**БӨРКӨҮ** [2] *с.* Эҫе ауыр һауалы; тонсоу. *Өй бөркөү булып китте, бәләкәй генә өйҙөң ни, аш бешергәндә усакка ла нык ягылган, самауыр ҙа эҫе көйө оҙак кына торгайны.* С. Агиш. *Көн бөркөү, тик тау ягынан гына әҙ-мәҙ ел иҫеп куя.* Н. Ҡәрип.

**БӨРКӨҮЕС** *и.* Шыйыҡлыҡ бөркә торған ҡорал.

**БӨРКӨҮЛЕК** *и.* Эҫе ауыр һауа. *Кискә табан гына кыҙыу бер аҙ һүрелде. Шулай ҙа бөркөүлек бөтөнләй бөтмәне.* Д. Бикташев.

**БӨРКӨҮЛӘНЕҮ** *к.* Бөркөүгә әйләнеү, бөркөү булыу. *Төнөн ныклап һыуынырга өлгөрмә-*

*гән һауа кояш күтәрелгән һайын бөркөүләнә бара.* С. Ҡудаш.

**БӨРКӨШӨҮ** *к. урт. кар.* **бөркөү** [1]. *Һыу бөркөшөү.*

**БӨРКӘЛЕҮ** *к. төш. кар.* **бөркөү** [1].

**БӨРКӘНДЕРЕҮ** *к. йөкм. кар.* **бөркәнеү.**

**БӨРКӘНЕҮ** *к.* **1.** Башты тотош ҡаплап ябыныу. *Баштан-аяҡ бөркәнеү. Бөркәнеп ятыу. Юрған бөркәнеү.*

**2.** Башҡа ябыныу. *Шәл бөркәнеү.* ■ *Мөхтәрәмә апай .. килен булып төшкәс тә, күшъяулыҡ бөркәнеп, кешеләрҙән йөҙөн йәшереп йөрөмәне.* Л. Ғәлимов.

**БӨРКӘНСЕК** *и.* **1.** *этн.* Ҡатын-ҡыҙ битен бөркәй торған баш ябыуы. *Бөркәнсек ябыныу.* ■ *Һәр бер бүрекле баш осрағанда битен ҡаплап ҡаса ине ул, өйҙә яңғыҙ ҡалған саҡта ғына бөркәнсеген аса ине ул.* М. Ғафури.

**2.** Мәйетте күмгәндә йөҙөнә ҡаплай торған ябыу.

**3.** Ҡарындағы баланы уратып ҡаплаған яры; йөҙлөк.

**БӨРКӘҮ** *к.* **1.** Баштан аша ҡаплап ябыу. *Юрған менән бөркәп яткырыу.*

**2.** Башҡа ябындырыу. *Шәл бөркәү. Яулыҡ бөркәү.*

**БӨРЛӨГӘН** *и.* **1.** (*йәки* **ҡара бөрлөгән**) Роза сәскәлеләр ғаиләһенә ҡараған сәнскәкле үрмә һабаҡлы туғай үҫемлеге. / Шул үҫемлектең ҡара күк төҫтәге, ҡурай еләгенеке кеүек бүлкәтле еләге. **Яр бөрлөгәне** *диал.* ҡара бөрлөгән.

**2.** (*йәки* **ҡыҙыл бөрлөгән**) Роза сәскәлеләр ғаиләһенә ҡараған өсәр-өсәр япраҡлы урман үҫемлеге. / Шул үҫемлектең асыҡ ҡыҙыл төҫтәге еләге.

**БӨРЛӘНТИН** [*рус.* бриллиантин ⟨ *фр.*] *и.* Үҙенән сыҡҡан ваҡ-ваҡ ҡына күберсекле йоҡа йылтыр тауар. *Һауаларҙа осҡан аҡҡош кеүек аҡ бөрләнтин күлдәк кеймәнем* (Халыҡ йырынан).

**БӨРЛӘТӘҮ** *и.* Ҡош-ҡорттоң ашҡаҙаны.

**БӨРМӘ** I *с.* Бөрөп, йыйырып тегелгән. *Бөрмә билле тун.* ■ *Кәҙерғоп инә. Уның өҫтөндә бөрмә билле бишмәт.* А. Таһиров.

II *и.* **1.** Кейемдең бөрөп, йыйырып теккән урыны. *Күлдәк бөрмәһе.*

**2.** Кейемдең йәки бүтән нәмәнең бау үткәреп бөрөлгән ере. *Тоҡсай бөрмәһе. Ыштан бөрмәһе.*

◆ **Бөрмә башлы** (*йәки* **ҡыйыҡлы**) дүрт яҡлап ябылған. *Бөрмә башлы өй.*

**БӨРМӘКӘЙ** *и.* Быуын-быуындан уратып сыҡҡан ваҡ япраҡлы, ойҡаш-ойҡаш аҡ, ал, һары сәскәле, йөнтәҫ ҡуш орлоҡло болон үләне. *Бөрмәкәй орлоғо.*

**БӨРМӘЛЕ** *с.* Бөрмәләп тегелгән. *Бөрмәле тун.*

**БӨРМӘЛӘҮ** *к.* Бөрмәле итеү, бөрмә яһау. *Күлдәктең билен бөрмәләү.*

**БӨРМӘТ** *и. диал. кар.* **бөрмә** II.

**БӨРӨ** *и.* Үҫемлектең япраҡҡа тумалған бәбәге. *Ағас бөрөһө. Бөрө ярыу.* ■ *Ағастарҙың бүрткән бөрөләре яҙ ҡояшының иркәләүе менән асылып, япраҡ яра башлай.* С. Ҡудаш. / Сәскәнең яңы тумалған бәбәге.

**БӨРӨЖ** [*ғәр.*] *и. иҫк. астр.* **1.** Ҡояштың йыллыҡ хәрәкәт юлы буйлап урынлашҡан ун ике йондоҙлоҡ төркөмө һәм уларҙың һәр береһе (**хәмәл, сәүер, жәүзә, саратан, әсәд, сөмбөлә, мизан, ғәҡрәп, ҡәүес, жәди, дәлү, хут**).

**2.** Шул йондоҙлоҡ нигеҙендә аталып йөрөтөлгән ун ике айҙың дөйөм атамаһы.

**БӨРӨЗ** *и.* **1.** Ағас һаплы лом; һөймән. *Бөрөз менән мәке уйыу.*

**2.** Умарта, кәмә эсән соҡой торған ҡасау башлы, ағас һаплы ҡорал. *Ай һары бал, һары бал, һары балды кем эсер? Имән ағас һайлаған, бағау, бөрөз ҡайраған — шул эсер* (Ҡобайырҙан).

**3.** Беҙ һымаҡ уҡ башағы.

**4.** *диал.* Бағау.

**БӨРӨЛӨҮ** *к. төш. кар.* **бөрөү** 1—3. *Бөрөлгән итәк.*

**БӨРӨЛӘНЕҮ** *к.* **1.** Бөрө тумалтыу. *Япраҡҡа бөрөләнеү.* ■ *Баҡсалағы тирәк бөрөләнде, япраҡ ярырмын тип ахыры.* К. Кинйәбулатова. *Ваҡыт еткәс, бар сәскәләр ҙә аталар бөрөләнеп.* Ш. Бабич.

**2.** *күсм.* Ғәмәлгә билге биреү; яралыу. *Яңы бөрөләнгән тойғо.* ■ *Таланты яңы ғына бөрөләнгән, әле егерме ете йәшене лә етмәгән егет .. яу ҡырында һәләк булды.* «Ағиҙел», 1964, № 5.

**БӨРӨМ** *и. диал. кар.* **бөрмә** II.

**БӨРӨНӨҮ** *к. диал. кар.* **төрөнөү** 1.

**БӨРӨҮ** *к.* **1.** Тигеҙ һырҙар яһап йыйырыу, бөрмә яһау. *Итәкте бөрөү. Бөрөп тегеү.* ■ *[Әбей] өҫтөнә билдән бөргән оҙон ҡара күлдәк кейгән.* З. Биишева. *Ул [Исхаҡ] йәшел гимнастеркаһын бик ҡупшылап, арттан билен бөрөп, яҫы ҡайыш быуған.* Һ. Дәүләтшина.

**2.** Йыйырып остан тарайтыу. *Ауыҙҙы бөрөү. Тоҡто бөрөп бәйләү.*

**3.** Йыйып йомарлау. *Итәкте бөрөп тотоу.* ■ *Яҙғы ҡырау япраҡтарҙы бөргән.* М. Кәрим. / *күсм.* Ҡыҫҡан һымаҡ итеү. *Йөрәкте бөрөп алды.*

◆ **Бөрөп алып барыу** ҡыҫмаҡҡа алыу. *Дейеүҙәрҙе, аждаһаларҙы ҡыйратып бөттөм тигәндә генә Урал батырҙың өҫтөнә һанһыҙ күп ен-бәрей көтөүе килеп ябырылды, ти,— тын да алдырмайҙар, бөрөп алып баралар, ти, егетте* (Әкиәттән). **Бөрөп алыу** матҡып тотоу. *Хисамый стражникты яғаһынан бөрөп алып, ырандастан һөйрәп төшөрҙө.* Б. Бикбай. **Май бөрөү** *кар.* **май.**

**БӨРӨШ** *с.* Бөрөлөп бәләкәсәйгән. *Бөрөш ауыҙ.*

◆ **Бөрөш ҡасау** *кар.* **ҡасау** [2].

**БӨРӨШӨҮ** *к.* **1.** Кибеп, һулып, йомарланыу; ҡурышыу. *Бөрөшкән сәскә.* ■ *Бойҙай уңманы, башаҡланып, һутлана ғына башлағанда .. эҫегә сыҙамай бөрөштө.* Я. Хамматов.

**2.** Йыйырылып, тартылыу (телгә, ауыҙ эсенә ҡарата); ҡурышыу. *Муйыл ашаһаң, ауыҙ эсе бөрөшә.*

**3.** *диал. кар.* **бөршәйеү** 1.

**БӨРӨШТӨРӨҮ** *к.* **1.** Бөрөп, бәләкәсәйтеү, тарайтыу. *Йәш бала ят ҡулда ҡыйынһынып, ауыҙын бөрөштөрҙө лә илап ебәрҙе.* С. Агиш.

**2.** Киптереп, һулытып, йомарлау; ҡурыштырыу. *Эҫе ел ямғырға һауһаған ҡайын япраҡтарын ҡурҙы, бөрөштөрҙө.* Я. Хамматов.

3. Йыйырып, тартылдырыу; ҡурыштырыу. *Бешмәгән муйыл ауыҙҙың эсен бөрөштөрә.*

**БӨРСӨК** I *и.* **1.** Бик бәләкәс кенә бөртөк. *Ҡар бөрсөгө. Һыу бөрсөгө. Ысыҡ бөрсөгө.* ■ *Әхмәҙулла бабай маңлайына сыҡҡан тир бөрсөктәрен яҫы усы менән һыпырҙы.* Ә. Вахитов.

**2.** Өрөлөп торған бәләкәс кенә ҡабарсыҡ. *Үпкәлә туберкулёз бактерияларынан тәүҙә бәләкәй генә бөрсөктәр барлыҡҡа килә.*

II *с.* Бик бәләкәй. *Бөрсөк тир.* ■ *Бөрсөк алтын өсөн оҫталар газапланып тау-таш ваталар.* Р. Ғарипов.

**БӨРСӨКЛӘНЕҮ** *ҡ.* Бөрсөк булыу. *[Фатиманың] маңлайынан бөрсөкләнеп тирҙәр сыға.* Б. Бикбай.

**БӨРСӨКЛӘҮ** *ҡ.* Ишкән бауҙың тороп ҡалған остарын, йүкәләрен таҙартыу; бөрсөү. *Оморҙаҡ бабай ишкән арҡанын бөрсөкләп ултыра ине.* Ж. Кейекбаев.

**БӨРСӨЛӨҮ** *ҡ. төш. кар.* **бөрсөү.**

**БӨРСӨМӘ** *и. диал.* Сәбертке.

**БӨРСӨҮ** *ҡ.* Ишкән бауҙың тороп ҡалған остарын, йүкәләрен таҙартыу; бөрсөкләү. *Арҡан бөрсөү.*

**БӨРСӘ** *и.* **1.** Һикереп йөрөй торған ваҡ ҡыиа ҡан һурғыс паразит бөжәк. *Бөрсә талауға уянып киткән Вәлиҙең колағына ишек асылған тауыш ишетелгән кеүек булды.* С. Ханов.

**2.** *күсм.* Бәләкәй кәүҙәле етеҙ кешегә әйтелә. **Ут бөрсәһе** бәләкәй кәүҙәле, ут кеүек етеҙ кеше. *[Ҡояш] эшкә теше-тырнағы менән йәбешеп ята. Теләнә килгәндә телеп тә, теген тә бирә. Етеҙлеге, уңғанлығы яғынан — ут бөрсәһе.* Я. Вәлиев.

◆ **Ер бөрсәһе** *кар.* **ер.**

**БӨРСӘЙЕҮ** *ҡ.* Бөрсөк кенә булып сурайыу. *Бөрсәйеп сығыу.*

**БӨРТӨК** *и.* **1.** Бер төрлө ваҡ өлөшсәләрҙән торған нәмәнең берәмеге. *Алтын бөртөгө. Бойҙай бөртөгө. Ҡар бөртөгө. Сәй бөртөгө. Тары бөртөгө. Ынйы бөртөгө.*

**2.** Иҫәпләү; һанау берәмеге. *Дурт бөртөк мал. Ике бөртөк сәс.* ■ *Ҡулдар күтәрелмәне. Күтәрергә теләгән бер-ике бөртөк кеше булһа ла, улар йыйылыштағы күпселектең ырайын белгәнгәме, .. ҡул күтәрергә баҙманы.* Ғ. Дәүләтшин. *Оҙон ғына керпек һикһән бөртөк, нурлы йөҙҙәреңде ябалыр* (Халыҡ йырынан).

**3.** *күсм.* Ниҙендер бәләкәй генә бер өлөшө. *Кешеләр нимә генә һөйләһә лә һүҙҙәрендә хаҡлыҡ бөртөгө бар.* Ә. Вәли.

◆ **Бер бөртөк [тә]** *йәки* **бөртөк тә** бер ҙә, әҙ геиә лә. *Бөртөк тә бесән ҡалманы.*

**БӨРТӨКЛӨ** *с.* Бөртөк-бөртөк таралып торған, бөртөктәрҙән (1 мәғ.) торған. *Бөртөклө ашлыҡ. Бөртөклө сәй.*

**БӨРТӨКЛӘНДЕРЕҮ** *ҡ.* Бөртөклөгә әйләндереү. *Суперфосфатты бөртөкләндереү.*

**БӨРТӨКЛӘНЕҮ** *ҡ.* Бөртөклө-бөртөклөгә әйләнеү, бөртөклө-бөртөклө булыу.

**БӨРТӨКЛӘҮ** *ҡ.* Бөртөк-бөртөк итеп айырыу; берәмләү. *Бөртөкләп йолҡоу. Бөртөкләп һанау.* ■ *[Һыуһылыуҙың әсәһе — Олтанбикәгә:] Ҡыҙымдың ҡулдәгеи сисеп бирмәһәң, сәсеңде бөртөкләрмен* (Әкиәттән).

**БӨРШӘЙЕҮ** *ҡ.* **1.** Кәүҙәне, аяҡ-ҡулды йыйып, йомарланыу; шоҡрайыу. *Һыуыҡтан бөршәйеү. Бөршәйеп ултырыу. Бөршәйеп ятыу.* ■ *Аслы-туҡлы малдар буранда бөршәйеп тора.* К. Туйкин.

**2.** *диал. кар.* **бөрөшөү** 2.

**БӨРШӘЙЕШЕҮ** *ҡ. урт. кар.* **бөршәйеү** 1. *Бөршәйешеп йоҡлау.*

**БӨРШӘЙТЕҮ** *ҡ.* Бөрөш итеү; бөрөштөрөү. *Ауыҙҙы бөршәйтеү.*

**БӨРӘТ** *и.* Йыуан итеп боролған йүкә.

**БӨСӘЛ** *с. диал.* Булдыҡһыҙ.

**БӨСӘР** *с. диал.* **1.** Бәләкәй кәүҙәле, бәләкәй. *Бөсәр кеше.*

**2. бөсәрҙәр** *и. мәғ.* Бәләкәй балалар.

**БӨТКӨЛ** [1] *билд. а. кар.* **бөтә.** *Бөткөл халыҡ.*

**БӨТКӨЛ** [2] *с. диал.* Бөтөрлөк. *Сут та юҡ, бик күп еләк, күп .. донъяла бөткөл түгел.* Ш. Бабич.

**БӨТКӨЛЛӨ** *билд. а. кар.* **бөтә.** *Йәштәрҙең бөткөлләһе хеҙмәттә.*

**БӨТКӨЛЛӘЙ** *р. диал.* Бөтөнләй, тотош.

**БӨТКӨҺӨҘ** *с.* **1.** Бөтә торған түгел, бөтмәй торған. *Һанап бөткөһөҙ. Әйтеп бөткөһөҙ.* ■ *Уның [Златоустың] ҙурпығы һөйләп бөткөһөҙ.* Һ. Дәүләтшина.

**2.** Иге-сиге юҡ, сиктән тыш күп; бөтмәҫ. *Бөткөһөҙ байлыҡ. Бөткөһөҙ ҡыуаныс.//Бөткөһөҙ күп.* ■ *Халыҡ Иҙелгә генә түгел, Яйыҡ менән һаҡмарға ла бөткөһөҙ рәхмәт уҡыны* (Әкиәттән).

**БӨТКӘНЕ** *р.* Тотошо менән; шау. *Уҡсы батыр бер бейек матур йортҡа килһә, уның әсе лә, тышы ла бөткәне алтын, ти* (Әкиәттән).

**БӨТЛӘҮ** *и. диал.* Балыҡ ятыуы.

**БӨТМӨР** *с.* **1.** Эште ентекләп, урын, еренә еткереп эшләүсән. *Бөтмөр кеше.* ■ *[Хисамитдин:] Аллаяр әфәнде, бигерәк бөтмөр кешеһегеҙ икән: бер ҙә генә донъя эшенән бушамайһығыҙ.* Ф. Иҫәнғолов.

**2.** Һәр яҡтан етеш, бай. *Бөтмөр өй. Бөтмөр хужалыҡ.*

**БӨТМӨРЛӨ** *с. диал. кар.* **бөтмөр** 1.

**БӨТМӨРЛӘҮ** *ҡ.* Ентекләп, урын, еренә еткереү. *Бөтмөрләп эшләү.*

**БӨТМӨШ** *и.* Бөтә булған тәбиғи сифат (эйәлек формаһында ҡулланыла); булмыш. *Бөтмөшө шул.* ■ *Кешеләрҙең бөтмөшөнә ҡарап тотош төбәккә баһа бирелә.* «Совет Башҡортостаны», 1970, 19 сентябрь.

**БӨТМӘРСЕК** *и. диал.* Ҡуянтубыҡ.

**БӨТМӘҪ** *с.* Бик күп; бөткөһөҙ. *Бөтмәҫ кеүәт. Бөтмәҫ шатлыҡ.* ■ *Йөрөй генә торғас, уйҙар уйлап, бөтмәҫ ҡайғыларға тарыҡтым* (Халыҡ йырынан).

**БӨТМӘҪ-ТӨКӘНМӘҪ** *с.* Иге-сиге юҡ, сиктән тыш күп; иҫәпһеҙ-хисапһыҙ. *Бөтмәҫ-төкәнмәҫ дәрт. Бөтмәҫ-төкәнмәҫ көс. Бөтмәҫ-төкәнмәҫ шатлыҡ. Бөтмәҫ-төкәнмәҫ байлыҡ.*

**БӨТНӨК** *и.* Медицинала, парфюмерияла, кондитер эшендә ҡулланыла торған хуш еҫле үлән. *Бөтнөк еҫе.* ■ *Сағылдың ялангаҫ битләүҙәрендә аҡ башлы ҡылған, тәмле еҫ аңҡытып торған ваҡ ҡына зәңгәр сәскәле бөтнөк үләне үҫә.* Х. Ғиләжев.

**БӨТНӨКЛӨ** *с.* Бөтнөк ҡушылған, бөтнөк ҡушып эшләнгән. *Бөтнөклө кәнфит. Бөтнөклө теш порошогы.*

**БӨТӨКӘ** *с. диал. кар.* **ҡыҫыҡ** [1] 1 *Бөтөкә күҙ.*

**БӨТӨЛӨҮ** *к. эйһ. ф. кар.* **бөтөү**. *Биҙрәп бөтөлгән.*

**БӨТӨМ** *и.* **1.** Әҫәрҙең һуңғы, йомғаҡлау өлөшө. *А. Игебаев ижадына лирик тондар һәм афористик бөтөмдәр хас.* Р. Ниғмәти.

**2.** *кар.* **ос** 3.

**БӨТӨН** *с.* **1.** Күләме, дәүмәле кәмемәгән; теүәл. *Бөтөн алма. Бөтөн бурәнә. Бөтөн икмәк. Бөтөн такта.* / *күсм.* Кәм түгел; камил. *Иҫе, аҡылы бөтөн.*

**2.** Туҙған, тишелгән, зарарланған ере юҡ; туҙмаған, төҙөк. *Кәртә-кура бөтөн. Өҫ-баш бөтөн.* ■ *Минең кейем былай бөтөн булһа ла бик үк ҡупшы түгел.* Т. Йәнәби.

**3.** Мохтажлығы, кәмселеге юҡ; етеш. *Тормошобоҙ бөтөн.*//*Хәҙер халыҡ бөтөн йәшәй.*

**4.** Кәсергә бүленмәгән; теүәл. *Бөтөн һан. Ике бөтөн ундан биш.*

**5.** *кар.* **бөтә.**

**БӨТӨНЛӨК** *и.* **1.** Бөтөн (1—4 мәғ.) булыу хәле йәки сифаты. *Өҫ-баштың бөтөнлөгө. Һандың бөтөнлөгө.*

**2.** Эске бер берҙәмлекте тәшкил иткән, бер бөтөн булып күҙ алдына баҫҡан хәл йәки торош. *Дәүләттең бөтөнлөгө. Художестволы әҫәрҙең бөтөнлөгө.*

**БӨТӨНЛӘЙ** *р.* **1.** Бөтөн көйө, тулы көйө, өлөшкә бүлмәй. *Бөтөнләй ҡабыу.*

**2.** Тулыһы менән; тотош, тулыһынса. *Бөтөнләй онотоу.* ■ *Байгужа менән Буранбай .. бөтөнләй башҡа булып үҙгәреп киткән.* Д. Юлтый. *Аҡназар аҙ-маҙлап ауыҙына аш ала башлай, йөҙөнә ҡыҙыллыҡ сыға, өс көн тигәндә бөтөнләй шәбәйә* (Әкиәттән).

**3.** Бөтә ваҡытҡа, тотош, бөтөнләйгә. *[Һыуһылыу:] Балам, һинме был, Арыҫлангәлем? Һинме, тим балам, бөтөнләй ҡайттыңмы?* Ғ. Дәүләтшин.

**4.** Бик тә бик, бик ныҡ; тамам. *Бөтөнләй шаршып китеү.* ■ *Ана, Аҡселән йылғаһының шылтырауы ла ниндәй яҡында, бөтөнләй эргәлә генә кеүек ишетелә.* Б. Бикбай.

**5.** Һис бер, һис. *Быныӊ менән бик иҫәпләп һөйләшергә кәрәк тип уйланым. Башта бөтөнләй яуап та биргем килмәне.* С. Агиш.

**БӨТӨНЛӘЙГӘ** *р.* Бөтә ваҡытҡа, тотош, бөтөнләй. *Бөтөнләйгә китеү.* ■ *Улар был үлемдең .. бөтә дәһшәтен яңы ғына төшөнгән кеүек, аталарын бөтөнләйгә юғалтыуҙарына әле генә ышанған кеүек, өсөһө бер юлы илап ебәрҙе.* Һ. Дәүләтшина.

**БӨТӨНЛӘНЕҮ** *к.* Тулы, теүәлгә әйләнеү. *Хәҙер килеп, халыҡ батырының яҡты һыны беҙҙең күҙ алдында Алпамыша кеүек ҙурая, күркәмләнә, бөтөнләнә бара.* Т. Сәғитов.

**БӨТӨНӨҺӨ** *билд. а.* Бөтә булғаны, барыһы, һәммәһе. *Нефттә кислород, күкерт һәм азот элементтары ла бар. Улар бөтөнөһө бергә гәҙәттә бер-ике проценттан артмай.* Д. Бураҡаев.

**БӨТӨНӘЙТЕҮ** *к. кар.* **бөтәйтеү.**

**БӨТӨРГӨС** [1] *и.* Киндерҙе һуғып бөтөр алда, буйлыҡ ҡыҫҡа ҡалып, сөйҙән күрөҫкә етмәй башлағас, осон бөтөрөп ҡуйыр өсөн ялғап тарттыра торған тейәкле бау.

**БӨТӨРГӨС** [2] *и. диал.* Юйғыс.

**БӨТӨРКӘ** *с. диал. кар.* **бөҙрә** 1.

**БӨТӨРЛӨК** *с.* Бөтә торған. *Эш бөтөрлөк түгел.*

**БӨТӨРӨЛӨҮ** [1] *к. төш. кар.* **бөтөрөү** [1] 1—6. *Бөтөрлөгән эш.*

**БӨТӨРӨЛӨҮ** [2] *к. диал. кар.* **өйрөлөү** 1.

**БӨТӨРӨНӨҮ** *к.* **1.** Төҫ ташлау, йонсоу; бирешеү. *Рәхимйән бабай, ахыры картайыуы етеп, бик бөтөрөндө.* Р. Сибәғәтов.

**3.** *диал. кар.* **меҫкенләнеү** 2.

**БӨТӨРӨҮ** [1] *к.* **1.** Аҙағына еткереү, тамам итеү; тамамлау. *Йыйылышты бөтөрөү. Уҡыуҙы бөтөрөү. Эште бөтөрөү.* ■ *Өй хәстәренниен бөтөргәс тә халыҡ салғы, ураҡ ҡулға алды.* Ғ. Амантай./Эш итеү; тамамлау. *Шәлен бөтөрөп ябынған.* ■ *Өй яңы, ҙур. Ахыры быйыл ғына бөтөрөп ингәндәр.* Р. Низамов./Алып барыу, башҡарыу. *[Ғариф:] Ана урыҫ мәрйәләре йәшелсә баҡсаһында бөтә эште үҙҙәре бөтөрә.* Б. Бикбай./Тотош бер нәмәнән эшләү. *Ынйы, мәрйендән бөтөрөү.* ■ *Һаҡмар йылға күперен таш буранан бөтөргән* (Халыҡ йырынан).

**2.** Кәметә-кәметә юҡ итеү; тамам итеү. *Аҙыҡты бөтөрөү. Һыуҙы бөтөргәнсә эсеү.* ■ *Ултыра торғас, мин теге кеҫәләге сәтләүекте бөтөргәнмен дә ҡуйғанмын.* Т. Йәнәби./Тотош тотоноу, тотош туҙҙырыу (аҡсаны, малды). *Аҡсаһын ашауға бөтөрә.* ■ *Ул [Иванов] тапкан-таянғанын Нинаның уҡыуына бөтөрә. Уны кейендерә, уның өсөн түләй.* Д. Юлтый.

**3.** Йыуып, юйып юҡ итеү. *Керҙе бөтөрөү.*/Булған сифатты юҡ итеү. *Көстө бөтөрөү. Түҙемлекте бөтөрөү.*

**4.** Сик һалыу, туҡтатыу. *Талашты бөтөрөү. Һуғышты бөтөрөү. Һүҙҙе бөтөрөү.*/Ғәмәлдән юҡ итеү. *Етешһеҙлекте бөтөрөү. Наҙанлыкты бөтөрөү.* ■ — *Ғәфү итегеҙ,— тине Әршит,— мин әсмәйем. Эсеү эш түгел. Бөтөрөргә кәрәк совет йәштәренә үткән көндән ҡалған был сирҙе.* Ғ. Сәләм.

**5.** Тар-мар итеү, юҡ итеү. *Дошманды бөтөрөү.*/Үлтереү, юҡ итеү. *[Әмирханов:] Бөтөрәм мин һине ошо баҫҡан урыныңда! Нисек һин минәң милли хисемә тейәһең!* С. Агиш.— *Юлда бөтөрөрҙәр инде баламды! — тип тыйыла алмай иларға тотондо Сәхип еңгә.* А. Ибраһим-Ҡыпсаҡ.

**6.** Яраҡһыҙ хәлгә килтереү, эшлектән сығарыу. *Шәм яҡтыһы күҙҙе бөтөрә. Насар юл машинаны бик тиҙ бөтөрә.* ■ *[Күсәр хан:] Үҙеңде бөтөрөп, ул тиклем ҡайғырма инде, ҡыҙым.* «Ҡуҙыйкүрпәс менән Маянһылыу».

**7.** Хәл ҡылымдың *-п* формаһындағы һүҙ менән килеп, ярҙамлыҡ ҡылым сифатында эш, хәрәкәткә тулылыҡ мәғәнәһе бирә. *Алып бөтөрөү. Ҡаҙып бөтөрөү. Туҙҙырып бөтөрөү. Уҡып бөтөрөү. Эсеп бөтөрөү.*

◆ **Эшен бөтөрөү** *кар.* **эш.**

**БӨТӨРӨҮ** [2] *к. диал. кар.* **бороу** [1] 2.

**БӨТӨРСӨК** *и. диал. кар.* **өйрөлтмәк** 1.

**БӨТӨРТӨҮ** *к. йөкм. кар.* **бөтөрөү** [1] 1—6. *Етешһеҙлекте бөтөртөү. Эште бөтөртөү.*

**БӨТӨҮ** *к.* **1.** Ахырға етеү, тамам булыу. *Ғинуар айы бөттө. Уҡыу бөттө. Ултырыш бөттө. Эш бөттө. Әҙерлек бөттө.* ■ *Һуҙем бөтһә лә те-*

*лемдә йырым бөтмәне, Уралым!* Салауат./Эш булыу, тамам булыу. *Төҙөлөш бөткән.*/Тотош бер нәмәнән эшләнеү. *Гел мәрйендән бөткән кашмау.* ■ *Өйҙөң стеналары һайлап йыйылған карағайҙан бөткән.* Ғ. Дәүләтшин.

**2.** Кәмей-кәмей юк булыу; тамам булыу. *Аҙык бөтөү. Акса бөтөү.* ■ *Кулыбыҙҙа патрон бөткәс, штык менән ташландык [Бәйеттән].*/Тотош тотонолоу (аксаға, малға карата). *Тапкан акса ашауға бөтөп тора.*

**3.** Йыуылып, юйылып юк булыу. *Быстрағы бөттө. Май табы бензинға бөтә.*/Ниндәйҙер бер сифат юк булыу. *Ауыртыу бөттө.*

**4.** Булған ерҙән тыныу; басылыу, туктау. *Ғауға бөттө. Һуғыш бөттө.* ■ *Уф тигәндә бөтһөн ине йөрәгем әрнеүҙәре* (Халык йырынан)./Ғәмәлдән юк булыу. *Куркыныс бөттө. Татыулык бөттө. Насар гәҙәт бөттө. Түҙем бөттө. Ышаныс бөттө.* ■ *[Котлояр:] Дөрөс, хәҙер килендәргә кайны, кайнағалар менән һөйләшмәскә тигән закон бөткән.* Һ. Дәүләтшина.

**5.** Тар-мар булыу, юк булыу. *[Гәрәй:] Барыһы китә, барыһы бөтә!* Б. Бикбай./Үлеү, һәләк булыу. *Башлык бөткән шунда: үткер һөңгө маңлайына барып катылған.* Б. Вәлит.

**6.** Яраҡһыҙ хәлгә килеү, эшлектән сығыу. *Көнө-төнө поход йөрөп, аяктарыбыҙ бөттө* (Бәйеттән). *Кешеләр арыны, бөттө.* А. Карнай.

**7.** Сифат кылымдың *-ған* формаһында үҙенән алда торған төбәү килештәгә һүҙ менән килеп, шул һүҙ аңлаткан сифатка йүнәлеүҙе белдерә. *Кирегә бөткән холок. Телгә бөткән кеше.*

**8.** *-п* формаһындағы хәл кылым менән килеп, ярҙамлык кылым сифатында эш-хәлдең һуңғы дәрәжәһен белдергән кушма кылым яһай. *Аптырап бөтөү. Арып бөтөү. Кейенеп бөтөү. Кибеп бөтөү. Туҙып бөтөү. Һарғайып бөтөү. Ябығып бөтөү.*

♦ **Бөтәһе түгел** бик күп, сикһеҙ күп. *Магазинда китап бөтәһе түгел.* **Көн бөтөү** *кар.* **көн** [1] 7. **Көнө бөтөү** *кар.* **көн** [1] 6. **Күңел бөтөү** *кар.* **күңел.**

**БӨТӨШ** *с.* Бәләкәй генә булып бөтәшеп торған. *Бөтөш күҙ.*

**БӨТӘ** *билд. а.* Бар булған; барлык, һәммә. *Бөтә донъя. Бөтә көскә. Бөтә хөрмәт. Бөтә тирә-як. Бөтә халык. Бөтә яктан.* ■ *Шоңкар булып осток урмандағы бөтә һукмак, бөтә аранан.* Ғ. Сәләм.

**БӨТӘЙЕҮ** *к.* **1.** Бөтөнгә (2 мәғ.) әйләнеү, бөтөн булыу. *Кәртәкура бөтәйҙе. Өҫ-баш бөтәйҙе.*/Кейем-каралдыны яңыртыу. *[Үмәр:] Йыл да алына торған нәмәләр түгел бит, йылы тура килгәндә бөтәйеп калырға кәрәк.* Һ. Дәүләтшина.

**2.** Мохтажһыҙға, етешкә әйләнеү; етеш булыу. *Тормош бөтәйҙе.* ■ *Бер ҙә байымаҫ һәм бөтәймәҫ эшселәр. Сөнки беҙҙә һис ирек юк, көсләйҙәр бит көслөләр.* М. Ғафури.

♦ **Күңел бөтәйеү** *кар.* **күңел.**

**БӨТӘЙТЕҮ** *к.* **1.** Бөтөнгә (2 мәғ.) әйләндереү, бөтөн итеү. *Кәртә-кураны бөтәйтеү. Өҫ-башты бөтәйтеү.* ■ *Әсәйемдең .. кулдәк иҙеүендәге .. әнәһе беҙ йыртып кайткан кейемде бөтәйтергә, ямарға әҙер генә була ине.* Ш. Янбаев./Яңы кейем-каралды менән тәьмин итеү. *Эшләгән арала ул [Саҙрислам] ысынлап та ғаиләне аҙырак бөтәйтте.* Ф. Исәнғолов. *Кейәү кыҙ кейәүләп йөрөй башлай. Килгән һайын бүләк алып килә, кыҙҙы бөтәйтә* (Туй йолаһынан).

**2.** Етеш, махтажһыҙ итеү. *Донъяны бөтәйтеү.*

**БӨТӘРЛӘҮ** *к. диал.* Ойпалау, йомарлау.

**БӨТӘҮ** *с.* **1.** Үҙ рәүеше боҙолмаған, ярғылап бүлгеләнмәгән; бөтөн. *Бөтәү ағас. Бөтәү арыш. Бөтәү бәрәңге.*

**2.** *диал. күсм.* Эшләп каҡшамаған, бирешмәгән. *Бөтәү кеше.*

♦ **Бөтәү яра** ауыҙланмаған, эстән эренләгән яра.

**БӨТӘҮЛӘЙ** *р.* Бөтәү көйө, йомро көйө. *Бөтәүләй бешерелгән картуф.*

**БӨТӘҺЕ** *билд. а.* **1.** Бар булғаны; барлығы, һәммәһе. *Бөтәһе биш китап.* ■ *Бында [магазинда] бөтәһе һигеҙ хеҙмәткәр.* С. Агиш.

**2.** *и. мәғ.* Бөтә кеше йәки нәмә. *Котлоярҙың һүҙенә бөтәһе лә кыскырып көлөп ебәрҙе.* Һ. Дәүләтшина.

**БӨТӘШ** *с.* Ауыҙланып, тишек булып торған ере тыштан тартылып көпләнгән. *Бөтәш яра.*

**БӨТӘШЕҮ** *к.* Тартылып, тығылып көпләнеү (ауыҙланып, тишек булып торған ергә карата). *Уны [парафинды] вакытында таҙартып өлгөрмәһәң, .. нефть юлы бөтәшә.* Ә. Байрамов. *[Ғәйзулланың] бөтәшкән яраһы асылған ине.* Д. Бүләков.

**БӨТӘШТЕРЕҮ** *к.* **1.** Бөтәш итеү. *Төлкө ағастың әбей сапкан ерен ялап бөтәштереп куйҙы, ти* (Әкиәттән).

**2.** Йүнәтәү, ямау. *Йорт-кураны бөтәштерергә әҙ-мәҙ төҙөлөш материалы кәрәк ине.*

**БӨХИЛ** [*ғәр.*] *с.* Аҡсаһын, нәмәһен бик кыҫып тотоусан, һаран. *Бөхил кеше.* ■ *Бигерәк тонсоғоп йәшәй бит ул Зөләйха. Ғибад бөхил киноға ла йөрөткәне юк уны.* Н. Мусин.

**БӨХТӘ** [*фарс.*] *с.* **1.** Таҙалык, йыйнаклык һаклаусан; таҙа, матур итеп эшләүсән. *Бөхтә кеше.*

**2.** Таҙа, матур күренешле; йыйнак, ыҫпай. *Бөхтә кейем. Бөхтә өй.*//*Бөхтә кейенеү.*

**БӨХТӘЛЕК** *и.* Таҙа, матур күренеш; йыйнаклык, ыҫпайлык. ■ *Күпереп яткан ак мендәрле койкалар оҙон, якты казармаға тағы ла бер йыйнаклык, бөхтәлек, матурлык биреп тора.* Н. Ҡәрип.

**БӨХТӘЛӘҮ** *к.* Бөхтә итеү. *Кейеҙ менән көпләнгән өлкән һандык өҫтөнә яҫтык, түшәк, юрған, кейеҙ кеүек нәмәләр бөхтәләп өйөп куйылған.* И. Көҫәпкол.

**БӨШӨГӨҮ** (бөшөк-) *к. диал.* Күшегеү.

**БРАДӘР** [*фарс.*] *и. иҫк. кит.* **1.** Ир туған.

**2.** Дуҫ, иптәш. *Был заман халык зирәк бит, брадәрем, тиҙ бәләләр эсендә ни нәмә барын.* М. Ғафури.

**БРАЗИЛ** *и.* Бразилияның төп халкын тәшкил иткән милләт һәм шул милләттең бер кешеһе.

**БРАК** [*рус.* 〈 *нем.*] *и.* Шартына килтермәй, берәй етешһеҙлек менән эшләнгән нәмә. *Брак яһау. Бракка сығарыу.*//*Брак нәмә.*/Кәмселек, етешһеҙлек. *Брак табыу.* ■ *Брак изделиелар, түбән сифатлы тауарҙарҙы эшләп сығарыуҙы булдырмаҫлык кардиналь саралар кәрәк.* «Совет Башкортостаны», 1986, 26 февраль.

**БРАКОНЬЕ́Р** [*рус.* ⟨ *фр.*] *и.* Тейешһеҙ урында һәм ваҡытта йәки тыйылған ысул менән һунар иткән, балыҡ тотҡан кеше. *Иптәш Ҡотлогужин үҙе иң инсафлы балыҡсы булыу менән бер рәттән, балыҡ ҡороҡтостарының рәхимһеҙ дошманы, йәмәғәт башланғысы тәртибендә браконьерҙарға ҡаршы көрәштә ҡатнаша.* Д. Иҫламов.

**БРА́УНИНГ** [*рус.* ⟨ *ингл.*] *и.* Автоматик пистолет.

**БРАХМА́Н** [*рус.*] *и.* Һиндостандағы иң юғары ҡатлам кешеһе.

**БРАХМАНИ́ЗМ** [*рус.*] *и.* Яңы эраға тиклемге 8—9 быуаттарҙа барлыҡҡа килгән боронғо һинд дине.

**БРЕЗЕ́НТ** [*рус.* ⟨ *гол.*] *и.* Һыу үткәрмәй торған ҡалын беше туҡыма. // *Брезент плащ.*

**БРИГА́ДА** [*рус.* ⟨ *фр.*] *и.* **1.** Билдәле бер эш башҡарған төркөм. *Йәшелсә бригадаһы. Комплекслы бригада. Төҙөлөш бригадаһы. Бригада подряды.* / Поезды хеҙмәтләндергән кешеләр составы. *Поезд бригадаһы.*

**2.** Бер нисә полктан, батальондан, батареянан йәки бер үк төрлө бер нисә хәрби караптан торған ғәскәри берәмек. *Танк бригадаһы. Торпеда катерҙары бригадаһы.*

**БРИГАДИ́Р** [1] [*рус.*] *и.* Бригада (1 мәғ.) етәксеһе. *Төҙөүселәр бригадиры.*

**БРИГАДИ́Р** [2] [*рус.* ⟨ *нем.*] *и. тар.* Полковник менән генерал араһындағы хәрби дәрәжә (рус ғәскәренә Петр I индергән, Павел I бөтөргән) һәм шул дәрәжәләге хәрби кеше. *Бригадир булған һай Салауат егерме лә ике йәшендә* (Халыҡ йырынан).

**БРИГАДИРЛЫҠ** *и.* Бригадир вазифаһындағы эш. *Бригадирлыҡҡа кеше табырға кәрәк. Бригадирлыҡтан сығыу.*

**БРИЗ** [*рус.* ⟨ *фр.*] *и.* Көндөҙ диңгеҙҙән йылыраҡ ярға, төнөн ярҙан йылыраҡ диңгеҙгә табан иҫә торған әкрен ел.

**БРИКЕ́Т** [*рус.* ⟨ *фр.*] *и.* Берәй материалдан пресланып эшләнгән кирбес, плитка. *Күмер брикеты.*

**БРИКЕТЛАНЫУ** *к. төш. кар.* **брикетлау.** *Киптереп брикетланған йәшелсә, картуф Алыҫ Көнсығышҡа һәм төньяҡҡа оҙатыла.* М. Хисмәтов.

**БРИКЕТЛАУ** *к.* Брикетҡа һуғыу. *Ҡеүәтле машиналар күмерҙе онтай, ныҡлап киптерә, ҙур баҫым аҫтында брикетлай.* «Совет Башҡортостаны», 1969, 19 ғинуар.

**БРИЛЛИА́НТ** [*рус.* ⟨ *фр.*] *и.* Ҡырлап, шымартып эшләнгән алмас. *Бриллиант ҡашлы йөҙөк.* ■ *Алтынкайҙың яңы тыуған ай ҡашы бар, ҡолағында бриллиант күк алҡаһы бар.* Ш. Бабич.

**БРИ́ТВА** [*рус.*] *и.* Һаҡал, мыйыҡ ҡыра торған үткер бәке һәм шулай уҡ ҡырына торған ҡорамал. *Электр бритваһы.*

**БРИ́ЧКА** [*рус.* ⟨ *пол.*] *и.* Һыңар тәртәле, тимерле арба. *Бричка егеү. Бричкала барыу.* ■ *Арбалы, ҡырандаслы кешеләр менән бөтә юл тулған. Әммә иң күп үткәне бында ҙур тәгәрмәсле, бер тәртәлә арба. Уға дуғаһыҙ ғына бик шәп пар ат егеп ҡуйылған .. — Арба түгел, ә бричка,— тип аңлатты Иштуған.* З. Биишева.

**БРОМ** [*рус.* ⟨ *гр.*] *и.* **1.** Химик элемент, ҡара ҡыҙыл ҡуйы шыйыҡлыҡ (медицинала, химияла һәм фотографияла ҡулланыла).

**2.** Шуны ҡатыштырып яһаған нервы тынысландырғыс дарыу.

**БРОМЛЫ** *с.* Составында бром булған. *Бромлы калий. Бромлы тоҙҙар.*

**БРОНЕБО́ЙЩИК** [*рус.*] *и.* Броняны тишә торған ҡоралдан атыусы.

**БРОНЕВИ́К** [*рус.*] *и.* Броня менән көпләнгән машина.

**БРОНЕНО́СЕЦ** [*рус.*] *и.* Көслө артиллерияһы булған ҡеүәтле хәрби карап.

**БРОНЕПО́ЕЗД** [*рус.*] *и.* Тимер юл һыҙығында хәрәкәт итеү өсөн тәғәйенләнгән бронялы хәрби поезд. *Башҡортостан хеҙмәтсәндәре йыйған аҡсаға төҙөлгән танк, самолёт һәм бронепоездарға Салауат Юлаев исеме бирелә.* «Совет Башҡортостаны», 1986, 26 ғинуар.

**БРОНЕТАНКЛЫ** [*рус.* бронетанковый]: **бронетанклы ғәскәр** хәҙерге заман армияһында мөһим төрҙәрҙән һаналып, нигеҙҙә танк һәм үҙе йөрөмәле артиллериянан торған ғәскәр.

**БРОНЕТРАНСПОРТЕ́Р** [*рус.*] *и.* Ҡаршылауыҡлы йәки тәгәрмәсле булып, ғәскәр, йөк, ҡорал ташыу өсөн ҡулланылған, тотҡарлыҡһыҙ үтә ала торған бронялы хәрби машина.

**БРО́НЗА** [*рус.* ⟨ *фр.*] *и.* Баҡырҙың ҡурғаш һәм башҡа металл ҡатышҡан иретмәһе; ҡула. // *Бронза миҙал. Бронза һәйкәл.*

◆ **Бронза дәүере** *археол.* төрлө нәмә эшләү өсөн бронза ҡулланылған боронғо дәүер.

**БРОНЗАЛАНЫУ** *к. төш. кар.* **бронзалау.** *Бронзаланған рам.*

**БРОНЗАЛАУ** *к.* Бронза ялатыу. *Фото рамын бронзалау.*

**БРОНЛӘТЕҮ** *к. йөкм. кар.* **бронләү.**

**БРОНЛӘҮ** *к.* Бронгә теркәү. *Вагонда урын бронләү.*

**БРОНХИ́Т** [*рус.*] *и.* Ҡурылдай тиресәһенең шешеүе. *Хроник бронхит.*

**БРОНЬ** [*рус.* бро́ня] *и.* Кешене йәки нәмәне кемгә йәки нимәгәлер тәғәйенләп һаҡлау сараһы һәм шул тәғәйенлекте раҫлаған документ. *Бронь билдәләү. Бронь биреү.* ■ *Тимергәле район милиция бүлегенә эшкә инеп, бронь алғайны. Һуғышҡа бүтән китмәне.* Я. Вәлиев.

**БРОНЯ́** [*рус.*] *и.* Хәрби карап, машина һ. б. нәмәнең ҡорос көбө.

**БРОНЯЛАТЫУ** *к. йөкм. кар.* **бронялау.**

**БРОНЯЛАУ** *к.* Броня менән көпләү.

**БРОНЯЛЫ** *с.* Броня менән көпләнгән. *Бронялы танк.* ■ *[Һалдаттар] уңайлы позиция һайлап та өлгөрмәне, йөҙйәшәр ҡарағайҙарҙы шырпылай һындырып, яҡындағы ҡалҡыулыҡтан дүрткел бронялы «тигр» килеп сыҡты, уның артынан тиҫтәләгән еңел танк күренде.* «Совет Башҡортостаны», 1986, 28 ғинуар.

**БРО́ШКА** [*рус.*] *и.* Ҡатын-ҡыҙҙың түшкә ҡаҙай торған биҙәүесе. *Ҡашлы брошка. Брошка тағыу.*

**БРОШЮ́РА** [*рус.* ⟨ *фр.*] *и.* Ғәҙәттә ижтимағи-политик, фәнни һ. б. темаға бағышланған ҡағыҙ тышлы йоҡа китап. *Политик брошюра. Брошюра сығарыу.*

**БРОШЮРАЛАУ** *к.* Баҫылған китап-журналды тегеү; төпләү. *Брошюралау цехы.*

**БРУ́СТВЕР** [*рус.* ⟨*нем.*] *и.* Һуғышсыны һәм орудиены дошман утынан һаҡлау өсөн окоп алдына һалынған тупраҡ өйөмө.

**БРУ́ТТО** [*рус.* ⟨*ит.*] *с.* Һауыты менән берлектәге (тауар ауырлығына ҡарата); *киреһе* нетто. *Брутто ауырлығы. Брутто хаҡы.*

**БРУЦЕЛЛЁЗ** [*рус.*] *и.* Кәзә, һарыҡ, һыйыр малы һәм сусҡала булып, кешегә лә йоға торған бик ауыр һөйәк-быуын ауырыуы.

**БРЫ́НЗА** [*рус.* ⟨*рум.*] *и.* Һарыҡ һөтөнән яһалған сыр.

**БРЮНЕ́Т** [*рус.* ⟨*фр.*] *и.* Ҡара сәсле кеше.

**БУҒА** *и.* (*баш хәреф менән*) *астр.* Зодиактың береһе (Ҡуҙы һәм Игеҙәктәр йондоҙлоҡтары уртаһында урынлашҡан).

**БУҒАЙ** *мөн.* Ҡәтғиһеҙлекте,фаразды белдерә. *Йылғыр атҡа менгән берәү үтте, Шаһибәрәк тигән ир, буғай* (Халыҡ йырынан).

**БУҒЫР-БУҒЫР** *окш. кар.* **бығыр-бығыр.**

**БУҒЫРЛАТЫУ** *к. кар.* **бығырлатыу.**

**БУҒЫРЛАУ** *к. кар.* **бығырлау.**

**БУДДИ́ЗМ** [*рус.*] *и.* Яңы эраға тиклемге 6 быуат аҙағында төньяҡ Һиндостанда барлыҡҡа килеп, Тибет, Монголия, Һинд Ҡытайы, Ҡытай, Бирма, Япония һәм ҡайһы бер Көнсығыш илдәрҙә таралған дин.

**БУДИ́ЛЬНИК** [*рус.*] *и.* Кәрәк саҡта шылтыраһан өсөн махсус бороп ҡуйылмалы сәғәт.

**БУ́ДКА** [*рус.*] *и.* Бәләкәй генә махсус өй. *Кино будкаһы. Ҡарауыл будкаһы.*

**БУҘ** [1] *и.* Көлһыу күгелйем төҫ. *Аҡ буҙ. Күк буҙ. Ҡара буҙ.* ■ *Әйләп кенә ҡуйған ай йылҡымдың аҡ көктәрә бар ҙа буҙы юҡ* (Халыҡ йырынан).

**БУҘ** [2] *с.* **1.** Кеше биләмәгән, буш ятҡан; ҡола. *Буҙ дала.* ■ *Сиҙәм ерҙәр асыла, баш әйә буҙ яландар.* Н. Иҙелбай. *Бутәгә улән буҙ ялан кемгә түшәк булмаған?* Салауат Юлаев.

**2.** Иркендә йөрөгән, ирекле. *Урал тауы буйлап ҡайтып килә Хәнәлә лә байҙың буҙ малы* (Халыҡ йырынан). / *күсм.* Донъя йөгөнә егелмәгән; аяулы. *Буҙ бала.* ■ *[Айһылыу:] Мин бер саҡта ҡыҙ инем, иркә үҫән буҙ инем, дейеү мине урланы, кейәүгә биреп ҙурланы.* «Урал батыр». *Әрмеләргә китә ай башығыҙ, буҙ балалар, инде хушығыҙ* (Халыҡ йырынан).

**3.** Яҡыны, иптәше булмаған; яңғыҙ. *[Сәгиҙә:] Бутаһынан айырылған буҙ дөйәләй булып, буҙлап ултырам инде бына.* Һ. Дәүләтшина. *Сибәр генә сибәр йәшел өйрәк йөҙөпкәй ҙә йөрөй буҙ булып.* (Халыҡ йырынан).

**БУҘ** [3] *и. иҫк.* Ыласын. *Аҡҡыстан йүгерек уҡ булмаҫ, атһаң тейеп, буҙ алмаҫ* (Ҡобайырҙан).

**БУҘ** [4] *и. иҫк.* Ғауға, шау-шыу.

● *Киҫекһеҙ кешенән буҙ сыға.* Мәҡәл.

**БУҘ** [5] *и. кар.* **бүҙ.**

**БУҘА** [*фарс.*] *и.* Һоло, арпа йәки бойҙай ярмаһынан ҡайнатып әсеткән эсемлек. *Үтә байҙар бал эсә, урта байҙар буҙа эсә. Беҙҙең кеүек ярлы меҫкен ярҙан ятып һыу эсә* (Халыҡ йырынан).

**БУҘАҠЛАУ** *к. диал* Буй-буй ҡыҙыл итеү (киндерҙе). *Буҙаҡлап һ[illegible]*

**БУҘАН** *с. диал.* Дыуамал.

**БУҘАР** [*рус.* будара] *и. диал.* Ҙур ҡуш кәмә, йөк кәмәһе.

**БУҘАРТЫУ** *к.* **1.** Буҙ төҫкә индереү, буҙ итеү.

**2.** Төҫтө ҡасырыу, төҫһеҙләндереү. *Фәйзулланың һүҙҙәренән Зәкиәнең ҡуңыр йөҙөн буҙартып, ҡуйы ҡыҙыллыҡ йүгерҙе.* Ғ. Ғүмәр. / Насар йыуып, төҫөн боҙоу. *Керҙе буҙартыу.*

**БУҘАРЫНЫУ** *к.* Төҫ ҡасып, буҙ төҫкә инеү. *Хажигәле ҡыҙарынды, буҙарынды, ирене ҡалтырап, дер-дер һелкенеп ҡуйҙы.* М. Тажи.

**БУҘАРЫУ** *к.* **1.** Буҙ төҫкә инеү. *Төн буйы һайраны .. һандуғас, туҡталды бары буҙарып таң тыуғас.* С. Ҡудаш.

**2.** Төҫ ҡасыу, төҫһеҙләнеү. *Өшөп ирене буҙарған.* ■ *Бал ҡорто норлай буҙарып, сологонда бал бөтһә.* Ж. Кейекбаев. / Насар йыуылып, төҫө боҙолоу. *Ҡайнатып йыумағас, аҡ кер буҙара.*

**БУҘАТ** (*баш хәреф менән*) *и.* Кесе Етегәндең бер йондоҙоноң исеме. *Бәҙәнкәй етәү. Өлкәр нисәү? Һарат менән Буҙат тик икәү* (Халыҡ йырынан).

**БУҘҒЫЛ** *с.* Буҙ төҫкә тартым. *Буҙғыл күмер.*

**БУҘЛАҠ** *и. диал.* Буҙыҡай.

**БУҘЛАТЫУ** *к. йөкм. кар.* **буҙлау.**

**БУҘЛАУ** *к.* Һуҙып илау. *Мине носилкаға һалып, вагондан сығарғандарын күргәс, [Асия] буҙларға тотондо.* Д. Исламов. *Тағы [Тимеркәйҙең] теше һыҙланы, меҫкен көн-төн буҙланы.* Д. Юлтый. / *күсм.* Йәмһеҙ тауыш менән йырлау.

**БУҘЛАШЫУ** *к. урт. кар.* **буҙлау.** *Буҙлашып йырлап ултырыу.*

**БУҘТУРҒАЙ** *и. шул уҡ* **һабан турғайы** (*кар.* **турғай**).

**БУҘЫҠА** *и. кар.* **буҙыҡай.**

**БУҘЫҠАЙ** *и.* Ҡорҙоң һәм һуйырҙың инәһе.

**БУҘЫР** [*рус.* пудра ⟨*фр.*] *и.* Биткә яға торған хуш еҫле йомшаҡ онтаҡ. *Буҙыр һөртөү.*

**БУҘЫРЛАНЫУ** *к.* **1.** *ҡайт. кар.* **буҙырлау.** *Буҙырланып алыу.*

**2.** *төш. кар.* **буҙырлау.** *Бите буҙырланған.*

**БУҘЫРЛАУ** *к.* Буҙыр менән ҡаплау; буҙыр һөртөү.

**БУЖМАҠ** *с. диал.* Бурҫлаҡ.

**БУЙ** *и.* **1.** Нәмәнең оҙонлоҡҡа булған һуҙымы; оҙонлоҡ. *Буйы бер метр. Буйға үлсәү.* ■ *[Йәнтимер:] Мин был ҡаланың буйын да, арҡырыһын да үлсәп сыҡҡан инде.* С. Агиш. *Ҡояш байырға һөңгө буйы ер ҡалған.* В. Нафиков.

**2.** Кешенең йәки бер нәмәнең бейеклеккә булған үлсәме; бейеклек. *Бәләкәй буйлы кеше. Буйға үҫеү.* / Кешенең бөтә һыны; кәүҙә. *Зифа буй.* ■ *Берәй хәйлә табып, буйын күрһәм, ял була ла янған йөрәккә* (Халыҡ йырынан).

**3.** Ниҙеңдер бөтә оҙонлоғо биләгән ара. *Ауыл буйы. Иҙән буйы. Юл буйына ултырған ағас.* / Ниҙеңдер бөтә һуҙымындағы әйләнә тирәһе; эргә. *Йылға буйы. Ҡойма буйы.* ■ *[Ғариф:] Әбеҙ Муйыллы буйын тотош баҫса итә алабыҙ бит.* Б. Бикбай.

**4.** Оҙонға тартылған бер рәт. *Бер буй бурәнә. Бер буй түшәрлек таҡта.*

**5.** Оҙонға һуҙылған һыҙат. *Ике буй төймә тағыу.*

6. *с. мәг.* Оҙонға тартылған, оҙонлайға ҡуйылған. *Буй балаҫ. Буй һыҙыҡ. // Буй яткырыу.* ■ *Ап-аҡ ҡына ап-аҡ буй таҫма аҡ буҙ аткайҙарға дилбегә* (Халыҡ йырынан).

7. *с. мәг.* Оҙонлоҡҡа булған һуҙым йүнәлешендә үтә торған. *Буй быскы. // Буй бысыу.*

♦ **Буй алыу** ауырға ҡалыу. *[Һәүбән — әсәһенә:] Атам менән берлектә яуҙа юлдаш булғанһың, йола буйынса буй алып, миңә әсә булғанһың.* С. Мифтахов. **Буй биреү** 1) буйһоноу. *[Дәүләтов:] Ҡаршылыҡ күрһәткәндәрен атырға, буй биргәндәрен бәйләп алырға.* Р. Ниғмәти; 2) үҙ ыңғайына ҡуйыу; буйлатыу. *Балаға буй биреү.* **Буйға етеү** 1) үҫеп, тейешле бейеклеккә етеү. *Мең төрлө үләндәр, йәйге йылы ҡояштың һөйөп иркәләп үҫтереүе арҡаһында, буйға етеп өлгөрҙө.* Ғ. Дәүләтшин; 2) үҫеп, тейешле йәшкә етеү. *Зәлифәкәй һылыу буйға еткәс, һоҡланмаған кеше ҡалманы* (Халыҡ йырынан). **Буйға ҡалыу** *кар.* **буй алыу. Буйға һикереү** *йәки* **буй ебәреү** үҫеп оҙонайыу (игенгә ҡарата). *Һоло буйға һикергәс тә утауҙы туктаттылар.* А. Таһиров. **Буйҙағы бала** ҡарындағы бала. **Буйҙа булыу** ауырлы булыу. **Буй ебәреү** үҫеү. **Буй етеү** 1) ынтылғанда, үрҙәге нәмәгә ҡул етеү.— *Мин, — ти [Мәхмүт],— сөйгә элгән туныңды үҙем үрелеп алам. Минең буйым етә.* С. Агиш; 2) *кар.* **буйға етеү** 2. *Разия, тор инде. Ваҡыт етте. Йә кеше-фәлән килеп инер. Буй еткән ҡыҙға былай ярамай.* Н. Ҡәрип. **Буй ҡуйыу** ирек ҡуйыу. *[Урал — Шүлгәнгә:] Ҡыҙ һайланың — буй ҡуйҙым, ат һайланың — яй ҡуйҙым; дан эҙләргә теләнең — теләгеңә юл ҡуйҙым.* «Урал батыр». **Буй һалыу** 1) аяҡ үрә төшөп, һыуҙың тәрәнлеген үлсәү. *Беҙҙең генә Ҡомкүл һыуы тәрән, буй һалһам да буйым буйламай* (Халыҡ йырынан); 2) ҡолас ташлау. *Буй һалып йөҙөү.* **Буй(ы) буйына** туҡтауһыҙ, өҙлөкһөҙ. *Буйы буйына һөйләнеү.* **Буйына етеү** балаға етешеү. *Ағайым һуғышҡа китерҙән бер йыл элек кенә кәләш алғайны. Буйына еткән Шәмсекәмәр еңгәм һалдат оҙатҡанда .. ер-һыу илап ҡалды.* Ғ. Вәлиев. **Һыу буйы** *кар.* **һыу.**

● *Баланың буйын көтмә, аҡылын көт.* Әйтем. *Дөйәләй буйың булғанса, төймәләй аҡылың булһасы.* Әйтем.

**БУЙ-БУЙ** *с.* Күп буйлы, һыҙат-һыҙат. *// Буй-буй һырыған бишмәт.* ■ *Буй-буй күлдәктәр кейгәнһең, итәге ергә тейһен, тип* (Халыҡ йырынан).

**БУ́ЙВОЛ** [*рус.*] *и.* Ҡыуыш мөгөҙлөләр ғаиләһенә ҡараған ауыр кәүҙәле, ҡыҫҡа муйынлы көйөш мал (йорт хайуаны итеп аҫрала); һыу һыйыры. *Инә буйвол. Буйвол үгеҙе. Буйвол быҙауы.*

**БУЙҒА** *р.* Буй йүнәлештә. *Буйға тырматыу. Буйға ярылыу.*

**БУЙҘАҠ** *с.* **1.** Ҡатыны булмаған; ҡатынһыҙ. *Буйҙаҡ егет. Буйҙаҡ ир. // Буйҙаҡ йөрөү.*

**2.** Ҡатынһыҙ кешегә хас. *Буйҙаҡ ваҡыт. Буйҙаҡ тормош.*

**3.** *диал. кар.* **тол**[1].

**БУЙҘАН-БУЙ(ҒА)** *р.* Бөтә оҙонлоҡҡа, бөтә буйға. *Буйҙан-буй һыҙат төшкән. Буйҙан буйға йүгереү.*

**БУЙҘАНЛАУ** *к. диал.* Һуйҙанлау.

**БУЙЛАЙ** *р.* Буй йүнәлештә, буйҙан-буй. *[Әлекәй] буйлай юлаҡланып торған ҡыҙыл кәзәкей кейеп, билен ҡыҙыл былғау менән быуған.* Т. Хәйбуллин.

**БУЙЛАП** *бәйл.* Төп килештәге исем менән килеп, ниҙеңдер буй йүнәлешендә хәрәкәт итеүҙе белдерә. *Баҫма буйлап сығыу. Йылға буйлап барыу.* ■ *Урман ҡараусы айыу юлы күрә һәм уны буйлап китә.* «Совет Башҡортостаны», 1970, 20 февраль.

**БУЙЛАТЫУ** *к.* **1.** Буйлай хәрәкәт иттереү. *Йылға буйлатып алып барыу. /* Үрмәләтеп мендереү. *Бағана буйлатыу.*

**2.** Арҡыры-буй гиҙҙереү. *Ил буйлатып алып йөрөү.*

**3.** Ниҙеңдер ашаһына, төбөнә еткереү. *Аяҡты һыу төбөнә буйлатыу.*

**4.** *күсм.* Ирек ҡуйып, шаштырыу. *Баланы буйлатыу.*

**БУЙЛАУ** *к.* **1.** Буй йүнәлештә хәрәкәт итеү. *Ялан ягым, һиндә — сабый сағым, ҡырҙарыңды күпме буйланым.* Р. Бикбаев. *Йылғаһынан һыулаған, тупрағында аунаған, Урал буйын буйлаған .. батыры бар был илдең* (Ҡобайырҙан). /Үрмәләп менеү (ултырған ағасҡа, бағанаға). *Баҡан буйлау.* ■ *Табандарҙы төкөрөкләп, аҡ ҡайынға буйланыҡ.* А. Игебаев.

**2.** Ниҙеңдер ашаһына, төбөнә етеү. *Ҡаҙау таҡтаға буйламай.* ■ *Дим шундай тәрән булып сыкты — хатта ишкәк тә буйламай.* Х. Ғиләжев.

**3.** Буйһонмай, тейешле йүнәлештән, ыңғайҙан сығыу. *Сабыштарҙа буйлаған ат кеүек киттем, әсей, тотмай һүҙеңде.* Н. Нәжми. *[Хөснөтдин:] Ни эшләргә инде, Нурғәле ағай, бысҡы буйлай бит әле.* М. Мәжит.

**4.** *күсм.* Буйһонмай, тәртиптән сығыу. *Саҡ ҡына йомшаҡлыҡ күрһәтһәң, бала буйларға тора ул.*

**БУЙЛЫ** *с.* Буй һыҙатлы. *Буйлы балаҫ. Буйлы күлдәк.*

**БУЙЛЫҠ** *и.* **1.** Туҡыманың оҙонлоҡҡа оҙатылған ебе. *Әсәйем бик ентекләп, буйлыҡ ептәрен һанай ҙа төрлө-төрлө төҫкә буялған арҡаулыҡ йөндө улар аша үткәреп ала.* И. Ғиззәтуллин. *Фәниәнең бер кәләптә буйлыҡ өҙөлдө ҡапыл, ә икенсе станогына һоҫа ҡуйырға ваҡыт.* М. Сөндөклө.

**2.** Ышлыяның арттан әйләндереп, ике яҡ ҡолаҡбау төбөнә тартылған бауы.

**БУЙМА-БУЙ** *р. диал. кар.* **туранан-тура** 1. *Моталлап бабай хәҙер күптән инде колхоз эшендә буйма-буй ҡатнашмай.* Р. Ғабдрахманов.

**БУЙСАН** *с.* Буйға оҙон, оҙон буйлы. *Буйсан кеше.* /Буйы бейек. *Буйсан ҡарағай.*

**БУЙТ** *и. иҫк.* Нәмәнең үҙ хәрәкәтен, үҙ хәлен һаҡлау көсө; һәлмәклек; инерция.

**БУЙТЛАҠ** *и. һөйл.* Кеше һүҙен йөпләп, ҡеүәтләп торған кеше.

**БУЙТЛАУ** *к.* **1.** Ниҙелер килгән ыңғайына еллэтеп һуғыу. *Тәгәрләп килгән тупты буйтлау.*

**2.** *күсм.* Кешенең һүҙен йөпләү; ҡеүәтләү.

**БУЙТЛЫ** *с.* Бәргәндә, һелтәгәндә шәп оса, ныҡ тейә торған; һәлмәк, елле. *Буйтлы таяҡ.* ■ *Әсәйем өрлөккә ҡыҫтырып ҡуйған буйтлы*

*селекте кулына алһа, ағайым .. беҙҙе яклап алып кала ине.* Ш. Янбаев.

**БУЙТЫМ 1.** *с.* Тулыһынса етерлек; мул. *Ашау беҙҙе буйтым.*

**2.** *р.* Теләгәнсә, ҡәнәғәт булғанса. *Буйтым ашау. Буйтым йөрөү. Буйтым һыйлау.* ■ *Тупракты буйтым ашлаған, һәйбәтләп эшкәрткән, якшылап сәскән игенсене генә ер кинәндерә.* «Совет Башҡортостаны», 1969, 11 май.

**БУЙҺОНДОРОУ** *к.* **1.** Көс менән баш эйҙереү; теҙ сүктереү, бойондороҡло итеү. *Илде буйһондороу. Кешене буйһондороу.* /*күсм.* Яулап алып, үҙеңә хеҙмәт иттереү. *Тәбиғәтте буйһондороу.*

**2.** Кемдеңдер иркенә, ниҙеңдер яйына күндереү. *Баланы тәртипкә буйһондороу.*

**БУЙҺОНОУ** *к.* **1.** Кемдеңдер көсөнә баш эйеү; теҙ сүгеү. *Кешегә буйһоноу.* ■ *[Батша:] Батшалығымдың һауаһы шундай: кем дә кем миңә буйһона — шул иркен тын алып, рәхәт йәшәй; кем дә кем буйһонмай — ул кеше тыны кыҫылып, интегеп улә* (Әкиәттән). /*күсм.* Еңелеп хеҙмәт итеү. *Йылға буйһонды.*

**2.** Кемдеңдер иркенә, ниҙеңдер яйына күнеү. *Тәртипкә буйһоноу. Законға буйһоноу.*

**3.** Етәкселек аҫтында булыу. *Урындағы советтарға буйһонған ойошмалар.*

**БУЙ-ҺЫН** *и. йыйн.* Кешенең тышҡы рәүеше; кәүҙә. *Буй-һыны купшы.*

**БУЙҺЫУ** *с. диал.* Буйсан.

**БУЙЫ(НА)** *бәйл.* Төп йәки эйәлек килештәге ара һәм ваҡыт төшөнсәле һүҙҙәр менән килеп, эш-хәлдең дауамын белдерә. *Аҙна буйы эшләү. Юл буйына һөйләшеп килеү.* ■ *Ап-аяҙ бер яҙ көнөндә кырҙа йөрөнөм көн буйы.* Ш. Бабич.

**БУЙЫНСА** *бәйл.* **1.** Төп килештәге һүҙҙәр менән килеп, эш-шөғөлдөң йүнәлешен, йөкмәткеһен белдерә. *Эш буйынса һөйләшеү. Яҙғы сәсеүгә әҙерлек буйынса кәңәшмә үткәреү.*

**2.** Төп килештәге һүҙҙәр менән килеп, эш-хәлдең бер нәмәгә ярашлы, килешле рәүештә башҡарылғанын белдерә. *Исемлек буйынса өләшеү. Мода буйынса кейенеү. Күрһәтмә буйынса эш итеү. Кәңәш буйынса эшләү. Маршрут буйынса барыу.* ■ *Киске аш ашап .. алдыҡ та вәғәҙә буйынса Сәлмән ағай менән паркка киттек.* Т. Йәнәби.

**3.** Төп килештәге һүҙҙәр менән килеп, кемдең йәки ниҙеңдер үҙ-ара бәйләнеш, мөнәсәбәт нигеҙен белдерә. *Белеме буйынса медик.* ■ *Улар [Сакай менән Сафа] бала сактан уҡ мәҙрәсә буйынса дуҫ кеше.* Б. Бикбай.

**4.** Төп килештәге һүҙҙәр менән килеп нindәйҙер мөнәсәбәттәге эш төрөн, эш өлкәһен белдерә. *Нефть буйынса белгес. Шахмат буйынса беренсе урын.* ■ *Нинаның художестволы әҫәрҙәре әҙ ине, күберәге тимер юл транспорты буйынса техник белешмә китаптары.* Б. Бикбай. /Төп килештәге һүҙҙәр менән килеп, эш,шөғөлдөң таралыу өлкәһен белдерә. *Мәктәп буйынса дежур булыу. Район буйынса ярыш ойоштороу.*

**5.** *диал.* Буйы(на). *Бер ай буйынса ял итеү. Юл буйынса өндәшмәй барыу.*

**БУК** [*рус.*] *и.* Асыҡ көлһыу төҫтәге шыма ҡайырлы, япраҡлы эре ҡаты ағас.

**БУКЕ́Т** [*рус.* ⟨ *фр.*] *и.* Бер тотамға йыйылған сәскә. *Сәскә йыйып, букет яһап, мавзолейға ҡуйырбыҙ* (Халыҡ йырынан).

**БУКЕТЛАНЫУ** *к. төш. кар.* **букетлау.** *Букетланған көнбағыш.*

**БУКЕТЛАУ** *к.* Үҫемлек рәттәрен арҡырылай һөрөп, айырым төркөмдәргә бүлеү. *Шәкәр сөгөлдөрөн һәр ояла дүрт төп ҡалдырып букетлау.*

**БУКИНИ́СТ** [*рус.* ⟨ *фр.*] *и.* Тотолған, иҫке китаптар менән һатыу итеүсе.

**БУКИНИСТИК** *с.* Тотолған, иҫке китаптар менән һатыу иткән. *Букинистик магазин.*

**БУКСИ́Р** [*рус.* ⟨ *нем.*] *и.* Тартып йәки этеп йөк йөрөтә торған карап. *Мин бәләкәй генә буксир пароходым менән Ағиҙелдән һал тарттырҙым.* Р. Низамов.

◆ **Буксирға алыу** ярҙамсылыҡ итеү.

**БУКСИРЛАУ** *к.* Тағып һөйрәү; буксирға алыу.

**БУКСОВА́ТЬ** [*рус.*]: **буксовать итеү** шыйғалап, батып, китә алмай тороу (машинаға, тәгәрмәскә ҡарата).

**БУҠЫЛДАУ** *к. диал.* Бупылдау.

**БУЛА** *бәйл.* Төбәү килештәге һүҙҙәр менән килеп, эш хәрәкәттең ниәт, максатын белдерә. *Өйҙө елләтергә була тәҙрәне асыу.* ■ *Ике-өс кыҙ ишекте асмаҫка була кеҙегә килеп йәбеште.* Ж. Кейекбаев. *Гармунына була Ғимаҙиҙы Фатимаһы менән бер туйға саҡырғайнылар.* Д. Исламов.

**БУЛА́ВКА** [*рус.*] *и.* Сәнсеп ҡаптыра торған энә; төйрәүес. *Булавка ҡаҙау.* /Биҙәүес өсөн матур башлы итеп эшләнгән энә. *Галстук булавкаһы.*

**БУЛА́Т** [*фарс.*] *и.* **1.** Ҡорал өсөн ҡойолған боронғо ҡорос. // *Булат хәнйәр. Булат кылыс.* **Аҡ булат** иң яҡшы булат.

**2.** *(баш хәреф менән)* Ир-аҙ исеме.

● **Күк тимер булат булмаҫ.** Мәҡәл.

**БУЛАШТЫРЫУ** *к. диал.* Маташтырыу.

**БУЛАШЫУ** *к. диал. кар.* **булышыу** 3.

**БУЛҒАДИР** *и. иҫк. кар.* **бригадир** [2].

**БУЛҒАН** [1] *и.* Ҡулынан эш килгән; булдыҡлы. *Булған кеше.* ■ *Егет-тәрҙең булғаны, кыҙҙарҙың уңғаны [осрашыу] юлын барыбер таба торғайны.* С. Агиш.

**БУЛҒАН** [2], **бөтә булған** *билд. а.* Һәммә, барлыҡ. *Булған малды кыуыу. Бөтә булған халыкты йыйыу.*

**БУЛҒЫЛАУ** *к.* Һирәк-мирәк булыу. *Төрлө хәлдәр булғылай.*

**БУЛДЫҠЛЫ** *с.* Ҡулынан эш килгән, эшкә уңған; эшлекле.

● *Булдыклы эшкә тотонһа, ташыңды ла аш итер.* Мәҡәл.

**БУЛДЫҠЛЫЛАНЫУ** *к.* Булдыҡлыға әйләнеү, булдыҡлы булыу. *Булдыклыланып китеү.*

**БУЛДЫҠЛЫЛЫҠ** *и.* Ҡулдан эш килеү сифаты; һәләтлек.

**БУЛДЫҠҺЫҘ** *с.* Ҡулынан эш килмәгән; эшлекһеҙ. *Башкорттар борон-борондан алыҫ юлға арык атты эйәрләмәгән, булдыкһыҙ ирҙәрҙе илсе итеп ебәрмәгән.* М. Кәрим.

● *Булдыҡһыҙ эшкә тотонһа, ашыҡды ла таш итер.* Мәҡәл.

**БУЛДЫҠҺЫҘЛАНЫУ** *ҡ.* Булдыҡһыҙға әйләнеү, булдыҡһыҙ булыу.

**БУЛДЫРТЫУ** *ҡ. йөкм. ҡар.* **булдырыу.**

**БУЛДЫРЫЛЫУ** *ҡ. төш. ҡар.* **булдырыу** 1, 3. *Бәйләнеш булдырылды. Уңайлы шарттар булдырылды.*

**БУЛДЫРЫУ** *ҡ.* **1.** Барлыҡҡа, ғәмәлгә килтереү; бар итеү. *Аҡса булдырыу. Бәйләнеш булдырыу. Мөмкинлек булдырыу. Тәртип булдырыу. Уңайлы шарттар булдырыу.* ■ *БАССР Верховный Советы Президиумы закон менән билдәләнгән тәртиптә районлар һәм республика буйһоноуындағы ҡалалар булдыра, уларға исем бирә һәм исемдәрен үҙгәртә.* Башҡорт АССР-ының Конституцияһы, 1984. *Йыйылышта һәр кемгә айырым таҫтамал булдырырға тигән ҡарар сығарылды.* М. Тажи.

**2.** Эшләп эш итеү. *[Таһир] йырларға ярата һәм булдыра ла.* «Ағиҙел», 1969, № 8. *Кул эйәһе хәҙер инде вәғәҙәһен үтәмәй булдыра алмаған* (Әкиәттән).

**3.** Тейешле сифат, хәлгә еткереү. *Балсыҡты булдырыу. Ҡамырҙы булдырыу.* ■ *Ҡыҙ бик шәп итеп мунса булдырған да: «Әбей мунса булды, һине нисек алып барайым?»— тигән* (Әкиәттән).

**БУ́ЛКА** [*рус.* 〈 *пол.*] *и.* Бойҙай ононан ваҡ итеп бешерелгән икмәк; ваҡ икмәк.

**БУЛМАҒАН** *с.* Ҡулынан эш килмәгән; эшләкһеҙ. *Булмаған кеше.*

**БУЛМАҺА** *мөн.* Берәй нәмәгә ҡарата билдәле бер уй,фекергә килгәндә әйтелә. *Бик булмаһа. Һис булмаһа.* ■ *[Янһары:] Тукта, былай ярамай. Булмаһа, һунарға барып ҡайтайым әле* (Әкиәттән).

**БУЛМЫШ** *и.* **1.** Ғәмәлдә булған, ысынға тап килгән хәл. *Беҙҙең ураталағы булмыш һәр ваҡыт үҙгәреп тора.*

**2.** Ғәмәлдә булған, тәбиғәттән килгән сифат. *Бөтә йөрәге, булмышы менән художник икән шул Сания.* Н. Мусин.

**БУЛЫМЛЫ** *с. диал.* Булдыҡлы. *[Илғужа:] Эйе, был булымлы бисә ни етте ирҙәрҙән былай. Әбей батша кеүек.* Ғ. Ибраһимов.

**БУЛЫНЫУ** *ҡ. эйһ. ф. ҡар.* **булыу** 9, 13. *[Шатморат:] Етәр, былай ҙа күп ҡунаҡ булынды.* Д. Исламов.

**БУЛЫР-БУЛМАҪ** *с.* **1.** Тейешле самаға етмәгән; әҙ-мәҙ, барлы-юҡлы. *Булыр-булмаҫ белем.*

**2.** Тейешле сифат кимәленә килеп бөтмәгән; йүнһеҙ. *[Гөләйшә:] Эй-й-й, ҡуй инде, ҡасан һуғыш бөтә лә ир-ат әйләнеп ҡайта инде. Көнө лә, төнө лә булыр-булмаҫ кешеләргә ҡалды бит, ни эшләйһен.* К. Кинйәбулатова.

**БУЛЫУ** *ҡ.* **1.** Тормошта, булмышта урын алып тороу. *Барырға ат булманы. Бөгөн беҙҙә кеше булды. Һорау булды. Яуап булманы.* ■ *Уға [Рәшиҙәгә] иғтибар итеүсе лә булманы.* М. Тажи. *[Әбей:] Әҙерәк барғас яңғыҙ йорт, өс ҡайын булыр, шунда минең апайым тора* (Әкиәттән).

**2.** Тап булыу, осрау, килеп сығыу. *Тауҙа йылан күп була.* ■ *[Һылыуҡай:] Илама, балам, күҙ йәшең миңә булмаһын.* Б. Бикбай.

**3.** Эш-хәрәкәт, хәл, күренеш ғәмәлгә килеү, башҡарылыу. *Был ни хәл булды? Дәрес булмай. Туй була. Бойороҡ булды. Булған эш. Команда булды.* ■ *Тау текә, юл ҡырын .. Төрлө хәл була.* З. Биишева. *[Күсмәҫ хан менән Күсәр хан:] Беребеҙҙең ҡыҙ, беребеҙҙең ул булһа, ҡоҙа булышырбыҙ.* «Ҡуҙыйкүрпәс менән Маянһылыу».

**4.** Ҡайҙалыр урын биләү, ҡатнашыу. *Бергә булыу. Кәңәштең уртаһында булыу. Өйҙә булыу. Өмәле булыу. Үҙ урынында булыу. Эштә булыу. Әллә ҡайҙа булды.* ■ *[Ҡаҙаҡ малайы:] Минең тура ат өлкән бәйгеләрҙә булды. Бер атҡа ал биргәне юҡ!* Д. Юлтый.

**5.** Тыуыу, башланыу (тәүлек, йыл миҙгеленә ҡарата). *Кис булды. Йәй булды. Төн булды.* ■ *Йыл артынан йыл үтте, яҙ булды ла боҙ китте.* Салауат Юлаев.

**6.** Тылыу, уҙыу, үтеү (ваҡытҡа ҡарата). *Биш көн булды.* ■ *— Бына бер ай була инде — ошо позицияла ятабыҙ.* Д. Юлтый.

**7.** Берәй процесс һөҙөмтәһендә ниндәйҙер бер сифатҡа, рәүешкә һ. б. күсеү, әүерелеү. *Егет булыу. Врач булыу.* ■ *[Ҡыҙ:] Мин әбей ҙә була алам, теләгән бер нәмә һүрәтенә инә алам* (Әкиәттән). /Тейешле сифатҡа, хәлгә етеү, өлгөрөү. *Мейес булған. Мунса булды. Балсыҡты булғансы, үҙләнгәнсе баҫыу.* /*һөйл.* Эсеп иҫереү. *Бер аҙ булып алыу.*

**8.** Тейешенсә килеп сығыу, уңыу. *Эш булды. Булмаҫты — ҡыуыу.* /Ҡулынан эш килеү. *Уралып ятҡан Уралда булырҙай менән дуҫлашып, булмаҫтай менән усләшеп, яуға ҡаршы яу сабар батыр, батыр ирҙәр бар* (Ҡобайырҙан).

**9.** Берәй нәмә менән шөғөлләнеү, берәй эш алып барыу. *Уҡыу менән булыу. Буш менән булыу.* ■ *Әхмәҙи йорт тирәһендәге хужалыҡ эштәре менән булды.* Ж. Кейекбаев.

**10.** Әҙәрлеклəп йәки маҙаһыҙлап бәйләнеү. *Кеше менән булыу. Юҡ менән булыу.*

**11.** Берәй эш-хәрәкәттәге мөмкинлекте белдерә. *Ара алыҫ, йәйә барып булмай. Инһәм булаМы?* ■ *[Гөлнур:] Ҡара папкаһыҙ ғына, былай ғына ла әйтергә булалыр бит, Сафа Сөләймәнович?* М. Тажи.

**12.** Булды формаһында килеп, тейешле самаға етеү, тулыуҙы белдерә. *Булды, бүтән ашамайым.*

**13.** Ҡайһы бер исемгә, сифатҡа ҡушылып, ҡушма ҡылым яһай. *Бәхил булыу. Вафат булыу. Ғашиҡ булыу. Ҡунаҡ булыу. Мәхрум булыу. Риза булыу. Харап булыу. Хасил булыу. Хур булыу. Һәләк булыу. Әрем булыу.*

**14.** Исемгә, сифатҡа ҡушылып, ҡушма хәбәр бәйләнеше яһай. *Балтасы булып эшләү. Беренсе булып килеү. Ипле булыу. Кеше булып ҡыланыу. Тотоп ашарҙай булыу.* ■ *Ерҙә ниндәй генә гөл үҫмәһен, тиң була алмаҫ беҙҙең гөлдәргә.* М. Хәй. *Һәр ата өсөн үҙ ҡыҙы була алтын.* Р. Ниғмәти. *Ҡыуат та зирәк, телгә оҫта, сәсән булды микән атаһы?* (Халыҡ йырынан).

**15. Булды, булһын** формаһында килеп, ниндәйҙер сифат, хәлдең ҡабатланыуын белдерә. *Кисә булды — кисә һуңлап килде. Ҡыҙы булһын — ҡыҙы, үҙе булһын — үҙе эшкә йүгереп торалар.*

**16.** Төп ҡылымдың *≠***маҡ,** *≠***маҡсы,** *≠***рға** формаһынан һуң ярҙамлыҡ ҡылым сифатында килеп, маҡсатты белдерә. *Бармаҫҡа булыу. Яҙмаҡ булыу. Нишләп бында килергә булдың?* ■ *[Сәлмән] ағаларын алдан иҫкәртеп ҡуймаҡсы була* (Әкиәттән). /Төп ҡылымдың *≠***рға** формаһынан һуң **булһын** рәүешендә ярҙамлыҡ ҡылым сифатында килеп, теләкте белдерә. *Тырышып уҡырға булһын инде. Шатлыҡ менән ғүмер итергә булһын.*

**17.** Хәл ҡылымдың *≠***п** формаһынан һуң ярҙамлыҡ ҡылым сифатында килеп, берай эште эшләргә мөмкинлек йәки түгеллекте белдерә. *Ашап булмай. Эшләп булмай.* ■ *Был ҡоштан улай ҡотолоп булмай, сөнки ул күҙгә күренмәй торған ҡош* (Әкиәттән)./Хәл ҡылымдың юҡлыҡтағы *≠***май** формаһынан һуң **булмай** йәки **булмаҫ** рәүешендә ярҙамлыҡ ҡылым сифатында килеп, тейешлек, кәрәклекте белдерә. *Уҡымай булмай. Эшләмәй булмаҫ.*

**18.** Сифат ҡылымдың *≠***ған** формаһынан һуң ярҙамлыҡ ҡылым сифатында килеп, эш-хәрәкәттең ысынға тура килмәүен белдерә. *Ауырыған булып ятыу. Йоҡлаған (кеше) булып ятыу. Күпте белгән булып һөйләү.* ■ *Кис менән Гөлзифа, ниндәйҙер йомош тапҡан булып, Тәнзиләләргә үҙе килеп инде.* З. Ғәлимов.

**19.** Сифат ҡылымдың *≠***ған** формаһынан һуң ярҙамлыҡ ҡылым сифатында килеп, эш-хәрәкәткә кәмһетеп ҡарауҙы белдерә. *Ватып-емереп русса һөйләшкән булыу.* ■ *Килеүсе билен киң һары ҡайыш менән быуған, һул яғына кабуралы наган таҡҡан булған.* А. Таһиров.

**20.** Хәл ҡылымдың *≠***а** формаһынан һуң ярҙамлыҡ ҡылым сифатында килеп, кеше һүҙен шиккә алыу, кире ҡағыуҙы белдерә. *Мин шунда бара булам да, бабайҙы алып китә булам. Шәм ҡыуығы тора торғас, үҙе ярылып китә була.*

**21.** Төп ҡылымдың *≠***рға** формаһынан һуң **булһа** рәүешендә ярҙамлыҡ ҡылым сифатында килеп, ниндәйҙер ниәт, маҡсаттың шарт ителеүен белдерә. *Һөйләргә булһа, һөйләрбеҙ. Эшләргә булһа, барам.*

**22.** Киләсәк заман сифат ҡылымдың *≠***һы** формаһынан һуң юҡлыҡта ярҙамлыҡ ҡылым сифатында килеп, ҡәтғи тыйыуҙы, иҫкәртеүҙе белдерә. *Алаһы булма! Бараһы булма! Шаулашаһы булмағыҙ!*

**23.** Беренсе киләсәк заман сифат ҡылымдың юҡлыҡ формаһынан һуң ярҙамлыҡ ҡылым сифатында килеп, эш-хәрәкәттең киҫелеүен, өҙөлөүен белдерә. *Килмәҫ булыу. Әйтмәҫ булыу. Яратмаҫ булыу.* ■ *Ебәк кенә билгау, осо уҡа, уҡалары туҙмаҫ булһасы* (Халыҡ йырынан).

**24.** Төп ҡылымдың *≠***а/≠й** формаһынан һуң **булыр** рәүешендә ярҙамлыҡ ҡылым сифатында килеп, фараз итеүҙе белдерә. *Нарынбайға ҡарап, был кеше берәй ҙур ҡайғы кисерә булыр, тип уйлайһың.* Ш. Насыров.

**25.** Исем ҡылымдан һуң **була, булды** формаһындағы ярҙамлыҡ ҡылым сифатында килеп, икенсе бер эш-хәрәкәттең шунда уҡ башланғанын белдерә. *Театрға килеп аяҡ баҫыуым булды, .. гастролгә китеп тә барҙыҡ.* Ғ. Мансурова. *Ҡапҡаны асып ебәреүем булды, һарыҡтар атылып сыға башланы.*

**26.** Урын-ваҡыт килештәге исем ҡылымдан йәки исемдән һуң **булды** формаһында ярҙамлыҡ ҡылым сифатында килеп, берәй эш хәрәкәттең туҡтауһыҙ дауам итеүен белдерә. *Эшләүендә булды.* ■ *Халыҡ тыңламаны, һаман йыйылыу өҫтөндә булды.* Т. Хәйбуллин.

**27.** Сифат ҡылымдын *≠***ған** формаһында **булыр** рәүешендә ярҙамлыҡ ҡылым сифатында килеп, эш-хәрәкәттең билдәле бер мәлгә башҡарыласағын, тамамланасағын белдерә. *[Иренә — кәләше:] Ятып йоҡла. Иртән тороуыңа эш бөткән булыр* (Әкиәттән). / Шарт һөйләмдән һуң шул уҡ яһалышҡа **ине** ярҙамлыҡ ҡылымы ҡушылып, эш-хәлде билдәле шартҡа бәйләп, үткән бер мәлгә күсерә. *Приказ булмаһа, һаман да ятҡан булыр инек.* Д. Юлтый. *[Ҡыҙ — егеткә:] Мин килмәһәм, ошо ерҙә мәңге йоҡлаған булыр инең* (Әкиәттән).

**28.** Сифат ҡылымдың *≠***ған** формаһына **булған икән** рәүешендә ярҙамлыҡ ҡылым сифатында килеп, ниндәйҙер эштең, сифаттың бер билгеһе хәҙер килеп асыҡланғанын белдерә. *Бында ҡурай еләге бик уңған булған икән.*

**29.** Хәл ҡылымдың *≠***а** формаһына **торған булған,** *≠***р** формаһына **булған** рәүешендә ярҙамлыҡ ҡылым сифатында килеп, дауамлы, тәкрарлы күптән үткән заман формаһы яһай. *[Хасбулат:] Салауат батыр ғәскәрен һуғышҡа саҡырған сакта ошо боргоно ҡысҡырттыра торған булған.* З. Биишева. *Бабай һунарға йөрөгән, ә Шулгән менән Урал өйҙә ҡалыр булған.* «Урал батыр».

**30.** *диал. ҡар.* **туйыу** 3. *Бер аҙ уйын уйнап, көлөп булғандан һуң Мәсем хан бер уй уйлай, ти.* «Бабсаҡ менән Күсәк».

◆ **Була ул** ниҙелер үтәргә әҙерлекте белдергәндә әйтелә. — *Бар, утын алып ин! — Була ул!* **Булған да бөткән** үткәнде онотоорға кәңәш иткәндә әйтелә. **Булғас та булыр икән** бер эш, хәлгә, кешегә аптырап, иҫ, аҡыл киткәндә әйтелә. **Булһа кәрәк** мөн. буғай, шикелле. *Икенсе танкка бер ыңғай бер нисә снаряд..тейҙе булһа кәрәк, ул соҡорға аушайып төштө.* С. Кулибай. **Булыр ҙа булыр, ... булмаҫ** бер эш-хәлгә йәки кешегә ныҡ аптырағанда әйтелә. *Булыр ҙа булыр, булмаҫ бындай вәхшилек һәм яуызлыҡ.* Х. Ғиләжев. **Кем дә булһа** берәй кеше. **Ни булһа ла булыр** бер нәмәгә тәүәккәллек итергә йәки бер эш-хәлде үҙ яйына ҡуйырға булғанда әйтелә. **Ни ҙә булһа** берәй нәмә.

● *Булыр бала биләүҙән.* Әйтем. *Илле иле менән булғанда Иҙелбикә үҙе менән булған.* Мәҡәл. *Юл кешеһенең юлда булғаны яҡшы.* Мәҡәл.

**БУЛЫШ** *и. ҡар.* **булышлыҡ.**

**БУЛЫШЛЫҠ** *и.* Кеше эшен еңеләйтер өсөн булған ҡатнашлыҡ; ярҙам. *Булышлыҡ итеү.* ■ *[Аҡназар] үҙ-ара ярҙам комитетының әленәнәле булышлыҡ күрһәтеүе арҡаһында бер аҙ башҡуҙ алып, кәҙимге крәҫтиән булып алды.* Ғ. Дәүләтшин.

**БУЛЫШСЫ** *и. ҡар.* **ярҙамсы 1.**

**БУЛЫШЫУ** *к.* **1.** *урт. ҡар.* **булыу** 9. *Ҡунаҡ булышыу.*

2. Ярҙам итеү; ярҙамлашыу.

3. Мәшғүл булыу, шөғөлләнеү; маташыу. *Эш-бар менән булышыу. Радиоалғыс менән булышыу.* / Әҙәрлекләп, маҙаһыҙлап, бәйләнеү. *Бала менән булышыу. Кеше менән булышыу.*

**БУЛЬВА́Р** [*рус.* ⟨*фр.*] *и.* Ҡала урамының гәзәттә уртаһынан үткән киң аллея. *Бульвар буйлап йөрөү.*

**БУЛЬДО́Г** [*рус.* ⟨*ингл.*] *и.* Ҙур йәмшек томшоҡло, киң яңаҡлы, киң күкрәкле эре тоҡом эте.

**БУЛЬДО́ЗЕР** [*рус.* ⟨*ингл.*] *и.* Трактор алдына ер тигеҙләү, этәреү өсөн ҡуйыла торған киң ауыр тимер гөргөс һәм шул гөргөс ҡуйылған трактор. *Бульдозер менән юлды таҙартыу.*

**БУЛЬДОЗЕРИ́СТ** [*рус.*] *и.* Бульдозерҙа эшләгән кеше.

**БУМА́ЖНИК** [*рус.*] *и.* Аҡса, документ һалып, кеҫәлә йөрөтә торған бәләкәй генә күн янсыҡ. *Егет кеҫәһенән бер бумажник сығарып, [Ғәлиәгә] аҡса бирә.* А. Таһиров.

**БУМАЗЫ́Й** [*рус.* бумазея] *и.* Бер яғы өбөрөлө мамыҡ туҡыма. // *Бумазый күлдәк.*

**БУМАЛА** [*рус.* помело] *и.* Буяу, таҙартыу өсөн һаплап эшләнгән ҡыл йәки йүкә суҡ. *Маляр бумалаһы. Художник бумалаһы. Мөрйә бумалаһы.* ■ *Ала-ҡола алъяпҡыстар быуып, бумалалар күтәреп, буяусылар .. ашығып атлай.* Ғ. Ғүмәр.

◆ **Бумала баш** ҡырҡылған ялбыр сәсле ҡатын-ҡыҙға әйтелә.

**БУНДЕСВЕ́Р** [*рус.* ⟨*нем.*] *и.* Германия Федератив Республикаһы ҡоралды көстәренең исеме.

**БУНДЕСТА́Г** [*рус.* ⟨*нем.*] *и.* Германия Федератив Республикаһының юғары вәкилдәрҙән торған органы.

**БУ́НКЕР** [*рус.* ⟨*ингл.*] *и.* **1.** Бөртөклө һәм киҫәкле нәмә һала торған үҙе бушатылмалы һауыт. *Комбайн агрегаты баҫыу буйлап килә. Бункерға гәрәбә кеүек саф иген аға.* Ә. Вәли.

2. Караптың рейсҡа етерлек ҡаты яғыулыҡ һаҡлай торған махсус бүлеге.

3. Ер аҫтына эшләнгән һаҡланыр, ҡасыр урын.

**БУНТ** [*рус.* ⟨*нем.*] *и. ҡар.* **бола** 3.

**БУНТА́РЬ** [*рус.*] *и. ҡар.* **боласы.**

**БУП-** *киҫ.* **Бу**- ижеге менән башланған төп сифат һәм рәүешкә ҡушылып, артыҡлыҡ дәрәжәһе бирә. *Буп-буҙ. Буп-буш. Буп-бушаҡ.*

**БУПУП** *и. диал.* Һөҙһөт.

**БУПЫЛДАҠ** *с.* Гел ризаһыҙланып, һөйләнеп йөрөүсән. *Бупылдаҡ әбей.*

**БУПЫЛДАУ** *ҡ.* **1.** Ризаһыҙланып, асыуланып, үҙ алдына һөйләнеү. *Бупылдығы сығыу. Бупылдап һөйләнеү.*

2. Аңлайышһыҙ итеп ауыҙ эсенән һөйләү. *Бупылдама, асыҡ һөйлә!*

**БУР** [1] *и.* Аҡ төҫтәге йомшаҡ эзбиз ташы; аҡбур. *Бур менән яҙыу.* / Шул таштың онтағы. *Сынаяҡты бур менән таҙартыу. Өйҙө бур менән ағартыу.*

**БУР** [2] [*рус.* вор] *и. диал. ҡар.* **уғры 1. Һәптән бур** *шаяр.* үҙенекен үҙе урлаған кеше.

● *Бур байыҡмаҫ, бирән туймаҫ.* Мәҡәл. *Дөйә урлаған да бур, төймә урлаған да бур.* Мәҡәл.

**БУРА** [1] *и.* **1.** Бүрәнәләрҙең баш-башын киртеп, өҫтө-өҫтөнә һалып күтәргән ҡоролма. *Ҡоҙоҡ бураһы. Өй бураһы. Ҡәбер бураһы. Бура бурау.* ■ *Бүрәнәһе лә табылды, бураһы ла өлгөрҙө .. Кешеләр йыйнаулашып сыҡты ла әҙер бураны мүкләп күтәреп тә ҡуйҙы.* М. Тажи. *Буш биҙрә ҡоҙоҡтоң .. бураһына доңгор-доңгор һуғылып түбән төшә.* Ш. Янбаев. **Ҡара бура** нигеҙ тупрағын эстән уратып, иҙән аҫтына эшләгән бура.

2. Келәттә ашлыҡ, он кеүек нәмә һалыу өсөн бүлеп ҡуйылған урын. *Арыш келәттең өсҡә бүленгән ваҡ ҡына бураларына тулып, баҙрайышып ята.* Ғ. Дәүләтшин.

◆ **Бура туп** уйын исеме (уйнаусылар ике төркөмгә бүленә; билдәле аралыҡта ике дүрткел оя һыҙыла; шул оя эсенә ҡаршы оҙонлоғондағы йыуан ғына таяҡтар — туптар бурап ҡуйыла; ҡара-ҡаршы төркөмдәр беләк оҙонлоҡ таяҡ менән шул туптарҙы оянан бәреп сығырарға тырыша; ҡайһы төркөм алдараҡ сығарып бөтә, шул еңә).

**БУРА** [2] *и.* Оло ата дөйә.

**БУРАҘНА** [*рус.* борозда] *и.* Ер һөргәндәге һабан йырған йырынды. *Һабанға төшкән көн. Ваһап менән Шәмсетдин .. уландарына бураҙна ярып бирә лә шуның менән эштәре бөтә.* Ж. Кейекбаев. *Тракторҙа егет ер һөрә, бураҙнаһы ҡала артында.* М. Сөндөклө.

**БУРАҘНАЛАНЫУ** *ҡ. төш. ҡар.* **бураҙналау.**

**БУРАҘНАЛАУ** *ҡ.* Бураҙна һалыу. *Ҡара пар һәм туңға һөрөү, ваҡытында ерҙе бураҙналау тупраҡты йыуылыуҙан һаҡлай, дымды арттыра.* «Совет Башҡортостаны», 1977, 25 апрель.

**БУРАҠ** *и. диал.* Тырыз.

**БУРАЛАНЫУ** [1] *и.* Асыуланып, туҙыныу. *Ул ире менән бер ҙә уйнап-көлөп, тыныс ҡына һөйләшмәне. Бураланып, аҡырҙы ла баҡырҙы.* Ғ. Ибраһимов.

**БУРАЛАНЫУ** [2] *ҡ. төш. ҡар.* **буралау.** *Буралған ҡоҙоҡ.*

**БУРАЛАТЫУ** *ҡ. йөкм. ҡар.* **буралау.** *Ҡоҙоҡ буралатыу.*

**БУРАЛАУ** *ҡ.* Бура менән әйләндереү; буралы итеү. *Шишмәне буралау.*

**БУРАЛАШЫУ** *ҡ. урт. ҡар.* **буралау.** *Ҡоҙоҡ буралашыу.*

**БУРАЛЫУ** *ҡ. төш. ҡар.* **бурау** [1]. *Буралған өй.* ■ *Таштан буралған усаҡ өҫтөндәге оло ҡаҙанда аш бешереп маташҡан ҡатын эҫегә тирләгән битен алъяпҡысы менән һыпырҙы.* Я. Хамматов.

**БУРАМА** *и.* **1.** Мүкһеҙ генә күтәрелгән өй. *Унда бер бурама аласыҡ бар, шуны тәҙрәләтеп, йәһәт кенә мүккә күтәрткәндә арыу булыр ине.* Н. Мусин.

2. *диал. ҡар.* **бура** [1] 1. *[Шафиҡ] Ҡыҙ кәбереңең бурамаһын йүнәтә. Бураманы ике урынлы итеп бурай.* Ә. Вахитов.

**БУРАН** *и.* **1.** Ойоҡһотоп өргән ҡарлы ел. *Епшек буран. Ыжғыр буран. Әсе буран. Яҙғы буран.* ■ *Буран һаман ҡотора, буран ыжылдай. Буран тауышы һуҙып-һуҙып бүре олоған, сыйлап бала илаған тауышҡа оҡшай.* А. Карнай. **Аҡман-тоҡман бураны** *ҡар.* **аҡман-тоҡман.**

**Айыу бураны** ғинуар айында, йәнәһе, айыу әйләнгән саҡта, булған көслө буран. **Йәнәүле буран** *кар.* **һепертмә буран. Ҡом бураны** ҡомтуҙан күтәргән көслө ел. **Торнатүш буран** ҡарҙы ҡырлас-ҡырлас ҡатырып һала торған буран. **Һепертмә буран** өҫтән яумай, ҡар өҫтөнән йүгергән буран. **Һырғаҡ буран** өҫкә һырый торған епшек буран. **Шиһаҡа бураны** *диал.* аҡмантоҡман.

**2.** *күсм.* Көслө ыҙғыш, талаш.— *Әбүшахман корҙаш менән әрләшеп, бер аҙ эсте бушатып алдым. Шул ел менән ҡайтып, өйҙә лә буран борҡотоп алмаҡсы булғайным, Гөлйемеш еңгәгеҙҙең аҡылы еңде — буран сыҡманы.* С. Кулибай. **Ҡара буран** өйҙәге көслө талаш, ыҙғыш. *Күлдәк-фәлән алырға булһа, өйҙә ҡара буран сыға.* Ғ. Ғүмәр.

**3.** *(баш хәреф менән)* Ир-ат исеме.

♦ **Буран турғайы** *диал. кар.* **ҡыҙылтуш.**

**БУРАНКА** [*рус.* воронка] *и. кар.* **борғаҡ** [1].

**БУРАНЛАУ** *к.* Буран сығыу, буран булыу. *Аҙналар буйына буранлап яуған ҡарҙан юлдар өҙөлөп ҡалды.* М. Тажи.

**БУРАТЫУ** *к. йөкм. кар.* **бурау** [1]. *Бура буратыу.*

**БУРАУ** [1] *к.* Бура [1] итеп һалыу. *Өй бурау.* ■ *— Мораҭша .. бурап ҡуйған яңы өйөн һала алмай, ауылға кире ташып алды.* Һ. Дәүләтшина. *Ҡоҙоҡтоң эсен таш йә булмаһа бүрәнә менән бурарға кәрәк.* В. Ғүмәров.

**БУРАУ** [2] *к.* Өйрөлтөп-өйрөлтөп осороу; ойоҡһотоу. *Көтмәгәндә бурай-бурай ҡар яуып киткән.. Кәртә-ҡураны, тирмәне ҡар баҫҡан* (Әкиәттән). *Бурай ҙа ғына бурай ҡарҙар яуа* (Халыҡ йырынан).

**БУРАШЫУ** *к. урт. ярҙамл. кар.* **бурау** [1]. *Өй бурашыу.*

**БУРБАЙ** *и.* Аяҡтың бөгәрҙән түбән яғындағы йыуан ите; балтыр.

**БУРГОМИСТР** [*рус.* ⟨ *нем.*] *и.* Ҡайһы бер Европа илдәрендәге һәм элекке Россиялағы ҡала идараһының башлығы.

**БУРҘА** *и. диал.* Йыуынды.

**БУРҘАЙ** [*рус.* борзая] *и.* Нәҙек оҙон аяҡлы, оҙон асҡаҡ кәүҙәле йүгерек һунар эте. // *Бурҙай эт.* ■ *Мин .. эт затының байтағын; ҡарпыш ҡолаҡлыһын да, бүре ҡыуа торған бурҙайын да, төлкө тота торған тазыһын да .. күргәнем бар ине.* С. Кулибай.

**БУРҘАТ** *с. кар.* **бурлат.**

**БУРЖУА́** [*рус.* ⟨ *фр.*] *и.* Буржуазия синыфының вәкиле.

**БУРЖУАЗ** [*рус.* буржуазный] *с.* **1.** Буржуазияға мөнәсәбәтле, буржуазияға хас. *Буржуаз матбуғат. Буржуаз көнкүреш. Буржуаз партия.*

**2.** Буржуазияның өҫтөнлөгө менән билдәләнгән, буржуазия мәнфәғәттәрендә башҡарылған. *Буржуаз демократия. Буржуаз йәмғиәт. Буржуаз революция. Буржуаз республика.*

**БУРЖУАЗИ́Я** [*рус.* ⟨ *фр.*] *и.* Капиталистик йәмғиәттең етештереү ҡоралы һәм сараларына эйә булып, ялланған хеҙмәтсене иҙеү иҫәбенә өҫтәмә ҡиммәт алып йәшәгән хаким синыфы. *Буржуазия власы.*

♦ **Ваҡ буржуазия** етештереү сараларына эйә булып, ялланған хеҙмәтсене әҙ файҙаланған йәки бөтөнләй файҙаланмаған ваҡ хосуси милекселәр.

**БУРЖУ́Й** [*рус.*] *и. һөйл. кәмһ.* Буржуазия синыфының вәкиле. *Большевиктар әйтә: «Был донъяла ярлы халыҡ хөкөмө йөрөһөн, тип, ярлы, эшселәрҙең хас дошманы буржуйҙарҙың тамыры ҡороһон»,— тип.* Ш. Бабич.

**БУ́РКА** [1] [*рус.*] *и.* Кавказ халҡының тула һымаҡ итеп кәҙә йөнөнән баҫылған еңһеҙ ябынсаһы. *Иңгә бурка һалып, хәнйәр тағып, Дағстандан ҡайттым ҡунаҡтан.* М. Кәрим.

**БУРКА** [2] [*рус.* бурки] *и.* Кейеҙ йәки фетрҙан күн табанлап тегелгән итек. *Ғәлиәкбәрҙең өҫбаш та бик шәп бит инде. Ҡаракүл яғалы өр-яңы пальто, ҡаракүл бүрек, аяҡта һары күн һыҙмалы, ҡунысы ҡайтарылған аҡ бурка.* З. Биишева.

**БУРҠЫЛДАҠ** *с. кар.* **бупылдаҡ.**

**БУРҠЫЛДАУ** *к. кар.* **бупылдау.**

**БУРЛА́К** [*рус.* ⟨ *нем.*] *иҫк.* Ҡарап,баржаны йылға үренә арҡан менән һөйрәгән эшсе. *[Ярлы Минһаж] яҙ еткәс тә Өфөгә китте, унда Ағиҙел һәм Волга буйҙарында бурлактар менән «бәхет» тартты.* Ә. Ихсан. *Баржа тартып уҙған бурлактар... Аттай егелеп, ауыр баржаларҙы улар үргә һөйрәп баралар.* Р. Ғарипов.

**БУРЛАҠ** *и. диал.* Ҡалдау ер.

**БУРЛАНЫУ** *к. төш. кар.* **бурлау.** *Мейес ап-аҡ итеп бурланған.*

**БУРЛАТ** *с.* Ҡара ҡыҙыл. *Бурлат төҫ. Бурлат туҡыма. Бурлат күлдәк.* ■ *Мәк сәскәһе бурлат, алһыу була, ҡып-ҡыҙылы була, күрәне.* К. Кинйәбулатова. **Бурлат кеүек ҡыҙарыу** оялыштан йәки башҡа нәмәнән ҡып-ҡыҙыл булыу.

**БУРЛАТЫУ** *к. йөкм. кар.* **бурлау.** *Старостаның ҡатыны .. өй эсен йыйыштырырға кереште, иҙәндәрен йыуҙырҙы, мейесен бурлатты.* Ж. Кейекбаев.

**БУРЛАУ** *к.* Аҡбур менән ағартыу. *Балалар уҡыуға төшкәнсе мәктәптең тәҙрәләрен йыуыштырып, мейестәрен һылап, бурлап алаһы ла бар әле.* М. Тажи. *Атаҡайымдың сыуалын аҡбур менән бурлайым.* (Сеңләүҙән).

**БУРЛЫ** *с. диал.* Бурыл.

**БУРСА** [*рус.* брус] *и.* Дүрт ҡырлы итеп юнылған ағас. *Ғарифтың кәртәһе туң имән ағастарҙан юнып эшләнгән бурсалар тейәлгән йөктәр менән ҡапланды.* Ғ. Хәйри.

**БУРҪ-БУРҪ** *окш.* Асыуланып, ҡырыҫ-ҡырыҫ һөйләшеүҙе белдергән һүҙ. *Бурҫ-бурҫ итеп йөрөү.*

**БУРҪЛАҠ** *с.* Һимеҙ, тулы (биткә ҡарата). *[Яхин] әле йәш булыуына ҡарамаҫтан, тәненә ит ултырып бөткән, .. ҡыҙара биреп торған бурҫлаҡ битле кеше.* Н. Мусин.

**БУРҪЫЛДАУ** *к.* Бурҫ-бурҫ итеү. *Бурҫылдап йөрөү.*

**БУРТ** [*рус.* ⟨ *пол.*] *и.* Эҫкертләп, һалам менән ҡаплап ҡуйылған йәшелсә өйөмө. *Картуф бурты. Буртҡа һалыу.*

**БУРТАШ** *и. кар.* **аҡбур.**

**БУРҺЫҠ** *и.* Һыуһарҙар ғаиләһенә ҡараған оҙонса башлы, осло томшоҡло, йыуан кәүҙәле, ҡыҫҡа ҡойроҡло, шырт йөнлө йыртҡыс йәнлек.

*Беҙ әллә нисә тапҡыр бурһыҡ һуғырға барҙыҡ. Бурһыҡ өңөн Ҡарауыҙ табып бир[ҙе].* С. Кулибай. *Айыу менән бурһыҡ көҙ көнө ҡышҡа етерлек май йыя ла өндәрендә йоҡоға тала.* «Совет Башҡортостаны», 1975, 14 октябрь.

**БУРҺЫТЫУ** *к.* **1.** Боҙоп, еҫләндереү (ит, май кеүек нәмәне); һөрһөтөү. *Итте бурһытыу.*

**2.** Дым алдырып, күгәртеү, серетеү; бәҫәртеү. *Бесәнде бурһытыу. Кейемде бурһытыу.*

**БУРҺЫУ** *к.* **1.** Боҙолоп еҫләнеү (ит, май кеүек нәмәгә ҡарата); һөрһөү. — *Тоҙҙо аҙыраҡ һалғанмын да ит бурһыған да ҡуйған.* Б. Бикбай.

**2.** Дым тартып күгәреү, сереү; бәҫәреү. *Бурһыған ағас. Бурһыған бесән. Бурһыған иген. Бурһыған кейем.* ■ *Бурһыған япраҡ, ҡыуарған үлән, әрем еҫе аңҡытып иҫкән еүеш ел дә бәҫылды.* Я. Хамматов.

**3.** *күсм.* Дәртһеҙ, күңелһеҙ хәлгә төшөү.

**БУРЪЯҠ** *с.* Ҡом, балсыҡ ҡатнашып болғанған; болғансыҡ. *Элекке ваҡытта көмөш кеүек ағып ятҡан Һултан һыуы бөгөн һары төҫтәге буръяҡ һыуға әйләнгән.* Т. Хәйбуллин. *Ярһып ташҡан яҙғы һыуҙар тулҡын-тулҡын ярҙы ҡағалар, буръяҡ һыуҙар боларып, һыйышалмайса ҙур шыялар текәшеп ағалар.* Ғ. Амантай.

**БУРЪЯҠЛАНДЫРЫУ** *к.* Буръяҡҡа әйләндереү; буръяҡлау. *Һыуҙы буръяҡландырыу.*

**БУРЪЯҠЛАНЫУ** *к.* Буръяҡҡа әйләнеү. *Ул [Еҙем йылғаһы] үҙе шәп аға, ләкин буръяҡланмай.* М. Ғафури. *Буръяҡланып ажғырынған һыу ағышына ажарланып ынтылдылар: «Йә йән дә, йә тән». Ике көс — кеше һәм тәбиғәт менән ҡапма-ҡаршы көрәш башланды.* Н. Иҙелбай.

**БУРЪЯҠЛАТЫУ** *к.* Буръяҡҡа әйләндереү; бурьяҡлау.

**БУРЪЯҠЛАУ** *к.* Буръяҡҡа әйләндереү. *Һыуҙы буръяҡлау.*

**БУРЫЗ** *и. диал.* Борош.

**БУРЫҠ** *и.* Екән тамыры.

**БУРЫЛ** *с.* **1.** Буҙ менән ҡара ҡатнаш (йылҡы төҫөнә ҡарата). *Бурыл ат.* ■ *Колхоз председателе Иштуған йән-фарман сабып килеүҙән аҡ күбеккә батып, бурыл төҫкә әйләнгән туры айғырҙы ҡапыл туҡтатты.* Ф. Иҫәнғолов.

**2.** *и. мәғ.* Шул төҫтәге ат. *Ул [Әхмәт] бурылдың ялын һыйпай-һыйпай күҙҙәренә ҡарап моңайҙы.* Ғ. Сәләм.

**БУРЫС** *и.* **1.** Үтәлеүе мотлаҡ булып өҫтә торған эш. *Ата-әсә алдындағы бурыс. Граждан-лыҡ бурысы. Изге бурыс. Бурысты үтәү. Өҫтән бурыс төшөү.* ■ *БАССР гражданының интернациональ бурысы — башҡа илдәрҙең халыҡтары менән дуҫлыҡты һәм хеҙмәттәшлекте үҫтереүгә, дөйөм тыныслыҡты һаҡлауға һәм нығытыуға булышлыҡ итеү.* Башҡорт АССР-ының Конституцияһы, 1984. *Ил намыҫын һаҡлап яуға сығыу — батыр егеттәрҙең бурысы* (Халыҡ йырынан).

**2.** Алға ҡуйылған маҡсат. *Бурысты аңлатыу. Бурыс билдәләү. Бурыс итеп алыу.*

**3.** Кире ҡайтарыу шарты менән алынған аҡса йәки хаҡын аҙаҡ түләргә алған нәмә; үтес. *Бурысҡа алыу. Бурысҡа батыу. Бурысҡа биреү. Бурыслы булыу. Бурысты түләү.* ■ *[Имай:] Йә, ҡустым, утыҙ һум бурысыңды ҡасан түләйһең?* Һ. Дәүләтшина.

**БУРЫСЛЫ** *с.* **1.** Үтәлеүе мотлаҡ һәм изге булған эшле. *Колхоздар ерҙе ... эффектлы файҙаланырға, уға һаҡсыл ҡарарға, уның уңдырышлылығын күтәрергә бурыслы.* Башҡорт АССР-ының Конституцияһы, 1984.

**2.** Ҡайтарып биреү шарты менән аҡса йәки хаҡын аҙаҡ түләү өсөн бер нәмә алған; бирәсәкле. *Бурыслы кеше. / күсм.* Күргән изгелек өсөн ни менәндер ҡайтарырға тейешле. *Хафиз ағайға ул [Сәғиҙә] үҙен ғүмергә бурыслымын тип һананы.* М. Тажи.

**БУРЫШ** *и. диал.* Борош.

**БУРЯТ** *и. ҡар.* **бүрәт.**

**БУҪАҒА** *и. диал.* Ишек тупһаһы.

**БУҪАЛАҠ** *с.* Һимеҙ, таҙа. *Буҫалаҡ бала.*

**БУҪАЛАҠТАЙ** *с.* Ҙур, ауыр кәүҙәле; уҫлаптай. *Буҫалаҡтай бала.*

**БУҪАТЫУ** *к. диал.* Ҡурҡытып киҫәтеү.

**БУҪЛЫҒЫУ** (буҫлыҡ*ғ*) *к. диал.* Буҫығыу.

**БУҪТАУ** *и.* Уң яғы кейеҙләнеберәк торған ҡалын, бешә йөн туҡыма // *Буҫтау сәкмән. Буҫтау тышлы тун.* ■ *Кешеләр араһынан башына йәмшәйеп бөткән фуражка, өҫтөнә көнгә уңып ағара башлаған һоро буҫтау гимнастёрка кейгән сандыр буйлы бер йәш кеше күтәрелде.* М. Тажи. *Бүгәсәү батша бар, тиҙәр, буҫтау бишмәттәре мул тиҙәр* (Халыҡ йырынан).

**БЫҪЫҒЫУ** (буҫыҡ*ғ*) *к.* Оҙаҡ илап, быуылыу, хәлһеҙләнеү. *Буҫыҡҡанса илау.* ■ *Маһи, Билалдың киткәнен ишеткәс, илай-илай буҫығып бөттө.* А. Таһиров.

**БУТА** [1] *и.* **1.** Дөйә балаһы. *[Сәғиҙә:] Бутаһынан айырылған буҙ дөйәләй буҙлап ултырам инде бына.* Һ. Дәүләтшина.

**2.** *с. мәғ.* Уның йөнөнән эшләнгән. *Бута билғау.*

**БУТА** [2] *и. диал.* Билғау. *Аяғында йәшел ҡатаһы, билкәйендә ебәк бутаһы* (Халыҡ йырынан).

**БУТАЛ** [*рус.* поталь] *и.* **1.** Биҙәү эше өсөн әҙерләнгән йоҡа ғына табаҡлы йәки епле алтын йәки көмөш. *Алтын бутал. Көмөш бутал.*

**2.** Алтын, көмөш төҫөндәге буяҡ. *Бутал менән яҙыу. Бутал ялатыу.* /Сынаяҡ, һауыт буяғы. *Ҡыҙыл бутал. Күк бутал.*

**БУТАЛАНДЫРНУ** *к. йөкм. ҡар.* **буталаныу.**

**БУТАЛАНЫУ** *к. ҡөс. ҡар.* **буталыу.** *Буталаныт кеше араһында йөрөү. Эш менән буталаныу.*

**БУТАЛАУ** *к. ҡөс. ҡар.* **бутау** [1]. *Биҙрәләр менән генә ташып һибелгән һыу ҡырмыҫҡа ояһына таяҡ тығып буталау менән бер ине, киреһенсә, ул көлдө борхотоп, янғынды арттырып ҡына ебәрә ине.* И. Ғиззәтуллин.

**БУТАЛДЫРЫУ** *к. йөкм. ҡар.* **буталыу.**

**БУТАЛЛАНЫУ** *к. төш. ҡар.* **буталлау.** *Буталланған сынаяҡ.*

**БУТАЛЛАУ** *к.* **1.** Бутал менән биҙеү. *Һарайҙың буталлап, көмбәҙләп, алтын менән ябылған түбәләре .. күҙҙең яуын алып тора.* З Биишева.

**2.** Бутал буяҡ менән буяу. *Сынаяҡты буталлау.*

**БУТАЛЛЫ** *с.* Бутал менән биҙәүле. *Буталлы сынаяҡ.*

**БУТАЛСЫҠ** *с.* Рәт, тәртипһеҙ; сыуалсыҡ. *Буталсыҡ тормош. Буталсыҡ төш. Буталсыҡ уйҙар. Буталсыҡ фекер.* / Аңлауға ауыр, аңлайышһыҙ. *Буталсыҡ мәсьәлә.*

**БУТАЛСЫҠЛЫҠ** *и.* Ниҙәлер рәт, тәртип, анығлыҡтың булмауы, буталсыҡ хәл. *Мәсьәләнең буталсыҡлығы. Уйҙар буталсыҡлығы.*

**БУТАЛЫУ** *к.* **1.** *төш. кар.* **бутау** [1] 2, 3, 5.

**2.** Ҡушып аралашыу. *Тирә-яҡ хәрәкәткә килде. Төтөн, туҙан буталып, бер нәмә лә күренмәҫ булды.* И. Насыри.

**3.** Араға ҡыҫылып, бергә боларыу. *Аяҡ аҫтында буталыу.* ■ *Беҙҙең егет корона ингән өс үҫмер ҙә шунда бутала. Улар ҙа уйнай.* Ғ. Хәйри.

**4.** Кем менәндер аралашыу; сыуалыу. *Ҡатын-ҡыҙ менән буталыу. Сит кешеләр менән буталыу.*

**5.** Мәшғүл булып, ығы-зығы килеү; мәшәҡәтләнеү. *Эш менән буталыу.*

**6.** Тәртипһеҙ хәлгә килеү; *Беҙҙең полк тамам буталған. Ҡайһы рота, ҡайһы батальон икәнен аңлар хәл юҡ.* Д. Юлтый. / Тыныслыҡ, ығы-зығы хәлгә килеү. *[Сәгиҙә:] Хәҙер замана буталыбыраҡ тора. Кем гәйепле, кем хаҡлы икәнен белеүе ҡыйын.* М. Тажи.

**7.** Уй, фекер йүнәлешен юғалтыу. *Фәриҙә уйҙарының осона сыға алманы, буталып бөттө.* Р. Солтангәрәев.

**БУТАЛЫШ** *и.* **1.** Тәртипһеҙ, ығы-зығы хәл. *Ишек алды мал менән тулды. Һөҙөш, баҡырыш китте. Ҡуралағы буталыш Гәүһәргә һүҙҙе башлап ебәрергә мөмкинлек бирмәй торҙо.* И. Ғиззәтуллин.

**2.** Халыҡ араһындағы ризаһыҙлыҡ хәрәкәте; сыуалыш.

**БУТАЛЫШЫУ** *к. урт. кар.* **буталыу.**

**БУТАМА** *и. диал. кар.* **болғау** [2].

**БУТАНЫУ** *к.* Ниҙер эҙләп аҫтын өҫкә аҡтарыу; соҡоноу. *[Аллабирҙе:] Келәттә бутанып йөрөргә һиңә кем ҡушты?* Ш. Бикҡол.

**БУТАР** [*рус.* бутара]: **бутар эше** алтыны йыуылып, өйөп ҡуйылған ком-ташты һыуға ағыҙыу эше. *Бутар эшендә йөрөү.*

**БУТАРЛАУ** *к.* Алтыны йыуылып, өйөп ҡуйылған ҡом, ташты һыуға ағыҙыу. *Гольцев һуңғы йылдарҙа йыуып ташланған иҫке отвалдарҙы яҙғы ташҡын һыу менән бутарланы.* Я. Хамматов.

**БУТАРСЫ** *и.* Бутар эшендә эшләгән кеше.

**БУТАУ** [1] *к.* **1.** Ян-яҡҡа һелтәп, ниҙеңдер эсен таяҡ һымаҡ нәмә менән айҡау. *Йәнлек өңөн сыбыҡ менән бутау.*

**2.** Шыйыҡ йәки бөртөклө нәмәнең эсен әйләндереп-тулғандырып айҡау; болғатыу. *Ашты бутау.* ■ *Айыуғолаҡ көлдө бутап ҡарағайны, күмер булып бөткән бер көлсә килеп сыҡты, ти* (Әкиәттән). / Ҡушып аралаштырыу; болғатыу. *Киндер майы бутап, сейле-бешле итеп әҙерләгән тары бутҡаһы ашалды.* Ғ. Дәүләтшин.

**3.** Аҫтын өҫкә туҙҙырыу; аҡтарыу. *Һандыҡты бутау. Донъяны бутау.* ■ *Атайҙың китаптар менән тулған шүрлеген аҡтарып бөттөм бутап.* Ш. Бабич. /Ниҙеңдер тәртибен, тыныслығын боҙоу; болартыу. *Араны бутау.*

**4.** Асыҡ йүнәлештән яҙҙырыу; сыуалтыу. *Башты бутау. Фекерҙе бутау.*

**5.** Тейешле тәртиптән яҙҙырыу; яңылыштырыу. *Йоланы бутау. Һүҙҙе бутау.* ■ *Зәлифә ҡарт әсәһе өйрәткән теләктәрҙе бутай-бутай ҡабатланы.* Һ. Дәүләтшина. / Ике кеше йәки нәмәне үҙ-ара яңылыштырыу. *Исемдәрен бутау.* ■ *— Беҙ бер мәктәптә ике Сәлих, икебеҙҙең дә фамилия Мәхмутов. Кеше бутамаһын өсөн .. ул үҙен беренсе тип йөрөтә, ә мин — икенсе.* С. Агиш.

**6.** *диал. кар.* **болғау** [1] 1.

● *Алабута аш булмаҫ, ара бутаған иш булмаҫ.* Мәҡәл.

**БУТАУ** [2] *и. диал.* **1.** *кар.* **болғау** [2].

**2.** *кар.* **иҙелмә** [1] 1.

**БУТАУЫС** *и. диал.* **1.** *кар.* **болғауыс** 1.

**2.** *кар.* **гөмбөр** [2].

**БУТАФО́РИЯ** [*рус.* ⟨ *ит.*] *и.* Сәхнәлә йәки магазин күргәҙмәһендә ысын нәмәне алмаштырыу өсөн хеҙмәт иткән төрлө ялған нәмә (мебель, һауыт-һаба, ҡорал йәки тауар).

**БУТАШЫУ** *к. урт. ярҙамл. кар.* **бутау** [1] 1—3.

**БУТЕРБРО́Д** [*рус.* ⟨ *нем.*] *и.* Май яҡҡан йәки өҫтөнә сыр, колбаса кеүек нәмә һалған бер телем икмәк.

**БУТИРО́МЕТР** [*рус.* ⟨ *гр.*] *и. махс.* Һөттөң ҡуйылығын билдәләй торған прибор.

**БУТҠА** *и.* **1.** Һөткә йәки һыуға ҡуйы итеп ярманан бешергән ашамлыҡ. *Дөгө бутҡаһы. Тары бутҡаһы.* **Ҡара бутҡа** һыуға бешкән майһыҙ бутҡа.

**2.** Болғанып, иҙелеп ятҡан нәмә. *Аяҡ аҫты бутҡаға әйләнгән.*

**3.** *күсм.* Буталсыҡлыҡ. *[Рәис:] Берәмләп һүҙ алып һөйләгеҙ, был ниндәй бутҡа был!* Һ. Дәүләтшина.

◆ **Ауыҙ эсендә бутҡа бешереү** *кар.* **ауыҙ. Ҡарға бутҡаһы** яҙ көнө ҡырға сығып, ашарға бешереп, күңел аса торған ҡатын-ҡыҙ уйыны. *Яҙ көнө тауға ҡарға бутҡаһына сыҡҡанда, беҙҙең Исем ауылы ҡатындарынан төҙөү кейенгән кеше булмай торғайны.* З. Биишева. **Майлы бутҡа түгел** еңел түгел тигән мәғәнәлә әйтелә. *Ер эше майлы бутҡа түгел.* **Һүҙ бутҡаһы** *кар.* **һүҙ.**

**БУТЫЙ** [*рус.* боты ⟨ *фр.*] *и.* Еүеш, һыуыҡ көндө туфли тышынан кейә торған ҡуныслы аяҡ кейеме. *Йоҡа пальто, оҙон ҡуныслы резин бутый кейгән ҡыҙ, машина туҡтағас, өшөгәнен ныгыраҡ тойҙо.* Ә. Вәли.

**БУТЫР-БУТЫР** *оҡш.* Бутҡа бешкәндә сыҙҙан тауышты белдергән һүҙ.

**БУТЫРЛАУ** *к.* Бутыр-бутыр иткән тауыш сығарыу. *Бутҡа бутырлап бешә.*

**БУФ, буфф** *оҡш.* Ауыр итеп һулыш сығарғандағы тауышты белдергән һүҙ. *Буф итеү.* ■ *Түйгән һыйыр буф итеп ята.*

**БУФ-БУФ, буф та буф** *оҡш.* Ҡабат-ҡабат буф иткән тауышты белдергән һүҙ. *Буф-буф итеү. Буф та буф килеү.*

**БУ́ФЕР** [*рус.* ⟨ *ингл.*] *и.* Төкөлөү, бәрелеү көсөн йомшата торған ҡулайлама. *Вагон буферы.* ■ *Тауар поезы ауыр итеп буферҙарын буферға бәреп ҡуҙғалды.* Б. Дим.

♦ **Буфер дәүләт** ике дошман яҡтың бәрелешен кәртәләп, уртала ятҡан дәүләт.

**БУФЕ́Т** [*рус.* 〈 *фр.*] *и.* **1.** Һауыт-һаба, эсемлек ҡуя торған шкаф. *Дәүләтҡол буфеттан ром алып, рюмкаларға ҡойҙо.* Я. Вәлиев.

**2.** Эсемлек, ваҡ-төйәк ашамлыҡ һата торған урын. *Театр буфеты.* /Ҡапҡылап сыға торған урын. *Буфетка инеү.*

**БУФЕ́ТСЫ** *и.* Буфетта эшләгән кеше.

**БУФЫЛДАУ** *ҡ.* Буф-буф итеү. *Буфылдығы сығыу.*

**БУХА́НКА** [*рус.*] *и.* Бешкән бөтөн икмәк. *Бер буханка икмәк. Буханкалы икмәк.*

**БУХГА́ЛТЕР** [*рус.* 〈 *нем.*] *и.* Бухгалтерия (1 мәғ.) буйынса белгес. *Бухгалтер эше.*

**БУХГАЛТЕ́РИЯ** [*рус.*] *и.* **1.** Хужалыҡ эштәренә етештерелгән нәмә йәки аҡса иҫәбенә һалып хисап алып барыу теорияһы һәм практикаһы; иҫәп эше.

**2.** Хужалыҡ һәм ойошманың иҫәп бүлеге. *Колхоз бухгалтерияһы.*

**БУ́ХТА** [*рус.* 〈 *нем.*] *и.* Ел, дауылдан ышыҡ диңгеҙ ҡултығы. *Беҙ акрын ғына бухтаға инәбеҙ һәм причалдарҙың береһендә туҡталабыҙ.* «Совет Башҡортостаны», 1970, 26 сентябрь.

**БУШ**[1] *с.* **1.** Эсендә бер нәмә лә йәки бер кем дә булмаған. *Буш һауыт. Буш тоҡ. Буш сумаҙан. Буш аҙбар.* ■ *Шатланмаҫлыҡмы ни, уның [Ғарифтың] сыҫҡан йығылып төшһә, башы ярылырлыҡ буш бураһына йөҙ бот иген керҙе лә баһа!* Б. Бикбай. *Көршәк тулы булһа, ныҡлығын ул оҙаҡ йылдар һаҡлай. Ә буш көршәк иһә тора-тора үҙ алдына сатнай.* М. Кәрим. / Кеше йәшәмәгән, кешеһе булмаған; кешеһеҙ. *Буш өй. Буш урам.* ■ *Ауылда өйҙәрҙең күбеһе бикле йәки буш тора. Урамда һалдаттар күренә, ниндәйҙер команда тора бугай.* Д. Юлтый. / Бер кем тарафынан да йәки бер нәмә менән дә биләнмәгән, бер кем йәки бер ни ҙә биләп тормаған. *Буш баҙ. Буш бланк. Буш ерҙәр. Буш урындыҡ. Буш ылау.* ■ *Касса алдындараҡ бер буш урынға барҙым да халыҡты ҡарар өсөн стена буйына уңайлап һөйәлдем.* С. Агиш. *Нисә йыл буш ҡырҙарҙа ыңғырашҡайны тик бер ҡылған.* К. Кинйәбулатова. *Ул [Иван] малайҙар өҫтөнән ҡарап, өйрәтеп кенә йөрөргә тейеш булһа ла, буш ятҡан ер иркенлеген тойоп, үҙе эшкә керешеп китте.* Б. Бикбай. *Эҫелектән бер ҡайҙа ла сыҡмай ятҡан халыҡтың һирәкләп урамда ҡалғаны ла, был саңдың тигенгә күтәрелмәгәнен һиҙеп, өйҙәренә таралышты. Урам буш ҡалды.* Һ. Дәүләтшина. *[Йәнгәле] верандаға сығып ултырҙы. .. Ял йорто алды буш, тын.* Ф. Иҫәнғолов. / Бер нәмәһеҙ, өлөшһеҙ. *Муйыл ишек төбөнә йыйылып киткән бала-сағаны ла буш ҡалдырманы. Ҡалас һындырып йә баҙар икмәгенән берәр телем икмәк йә берәр лампасый өләште.* Һ. Дәүләтшина. *[Ҡыҙ — егеткә:] Мине һыуҙан айырһаң, бәхеттән буш ҡалырһың, барынан ҡолаҡ ҡағырһың.* «Аҡбуҙат». // — *Әгәр ҙә аҡылыңды йыймай эшләй торған булһаң, беҙ быны һиңә буш ебәрмәбеҙ.* Ғ. Дәүләтшин. *[Һин] һүҙ атҡылай, шаян һүҙҙәр ыҫҡындырғылай башланың. Мин дә буш ҡуйманым. .. Яуап ҡайтара торҙом.* И. Насыри.

**2.** Эш, шөғөл менән мәшғүл түгел; эшһеҙ. *Буш кеше. Буш ваҡыт. Буш булыу.* //*Буш йөрөү.* ■ *[Дәүләтбай:] Бына хәҙергә бер эшем дә юҡ, бушмын. Тик ятҡанса, бер аҙ эшләп булмаҫмы икән, тигәйнем.* И. Көҫәпҡол. *[Рәхимә:] Һәр ваҡыт уҡып, нисек арымайһығыҙ? Мин һеҙҙең буш торғанығыҙҙы һис бер күргәнем юҡ.* Ғ. Хәйри. *[Хисам] балыҡҡа беҙҙе әйәртеп алып бара, балыҡ булмаһа ла буш ҡалдырмай: ау, нәрәтәләрен яр башына сығарып, киптерергә йәйеп бөтә лә, беҙҙе ҡарауылларға ҡушып, үҙе һыу буйындағы яланда бесән сабырға тотона.* М. Тажи.

**3.** Хәрәкәт ирке сикләнмәгән, ни менәндер беркетелмәгән. *Һауаларҙан килә ике ҡош, береһе бәйле, береһе буш* (Халыҡ йырынан). // *Алға әйелеп килеп, аттың арҡаһына еңел генә ҡамсы төшөрөп, теҙгенен буш ҡуйҙым. .. Уҡ кеүек алға ынтылды.* Д. Юлтый.

**4.** Ниҙән дә булһа ҡотҡарылған, азат, берәй ниҙе биләмәгән.— *Бында барыбыҙҙы ла һөйләп тораһы юҡ. Бындай мөнтөктәрҙән берегеҙ ҙә буш түгелһегеҙ. Килдебайҙың да беҙҙең менән ҡойроғо туңған.* Ғ. Дәүләтшин. *Мин хәҙер бөтә хыялдан буш. Башҡа бер төрлө лә уй ҡилмәй.* С. Агиш.

**5.** Хаҡ түләтелмәгән; түләүһеҙ. *Буш мал. Буш кейем.* // *Буш алыу. Буш эшләү. Буш килгән мал.* ■ — *Бынау ҡатын-ҡыҙ күлдәге ни хаҡ тора?* — *Эһә, күлдәктәр! Эм-м.. буш инде, йәғни, үҙебеҙҙең кооператив магазины бит, буш тип әйтерлек арзан һата.* Б. Бикбай. *Мин үҙем пекарняла ҡамыр баҫырға биш һум биреп өйрәнгән булһам да Мөжәһиткә буш өйрәтмәксе булдым.* Т. Йәнәби. *Бара-тора Өйрәнсектең тупаҫ балсыҡ көршәктәренә көн бөткән. Инде уларҙы һатып алыусы түгел, буш алыусы ла булмаған.* З. Биишева. *[Ҡарыя — Рахмайға:] Буштың атаһы үлгән ул, ашаған хаҡыңа түләп кит.* К. Кинйәбулатова.

**6.** *күсм.* Төшөнкө рухлы, уйлау, фекерләүгә һәләтһеҙ. *Ямғыр һуңындағы тын һауа кеүек хәҙер минең баш тын, күңел буш, йөрәк талғын тибә.* Д. Юлтый. *Ләкин шиғырҙарым һаман гәйеп, күңелем дә инде буш һымаҡ.* М. Кәрим.

**7.** *күсм.* Етди булмаған, рухи яҡтан сикләнгән (кешегә ҡарата). *Буш кеше.*

**8.** *күсм.* Нигеҙендә дөрөҫлөк булмаған, нигеҙһеҙ. *Буш вәғәҙә. Буш өмөт. Буш хәбәр. Буш һүҙ.* ■ *Ә буш күңел асыуҙарға, мәғәнәһеҙ урам тапауҙарға, юҡ-бар уйындарға, буш ыҙғыштарға кеше күпме ваҡытын, көсөн әрәм итә.* Р. Солтангәрәев. — *Нәгимдең һүҙенә ышанһаң, әллә ысын, әллә буш,— тип һүҙен осланы [әсәйем].* Н. Мусин. *Өфө тигәндәре ошо икән. «Аҙашырлыҡ, яман, таш ҡала» .. тип һөйләүҙәре ерле буш икән.* Ғ. Амантай. / Файҙаһы булмаған, файҙа бирмәгән. *Окоп ҡаҙырға ҡуштылар. Беҙҙең һалдаттар көлә: — Крепостарға тыныслыҡ бирмәгән немец туптары был окоптарға ҡарап торамы һуң? Бары ла буш хеҙмәт инде! — тиҙәр.* Д. Юлтый. / Мәғәнәһе, эстәлеге юҡ. *Буш мәҡәлә. Буш әҫәр.* ■ *Ғүмерем үтте бикәрерәк, буш ел ҡыуҙым да ҡыуҙым.* Ш. Бабич. *Күрә*

*алманым донъя рәхәтлеген: байға эшләп ғүмерем буш үтте* (Халыҡ йырынан).

**9.** Юҡ хөкөмөндәге, юҡ тип әйтерлек, әһәмиәте, баһаһы юҡ тип әйтерлек. *Баҡый Ныязғолдоң халыҡтан буш хаҡҡа вечныйға алған ерҙәренең әле тулыһы менән ҡайтарылып, түләнеп бөтмәгәнлеген һөйләне.* Һ. Дәүләтшина. *Мейес алдына тәгәрләп төшөп, өҫтәре инде аҡһыл көл менән ҡапланып, һүрелә башлаған ҡуҙҙарға текәлде. Бына ул күмер тотош һүрелеп бөтөп, буш көл генә булып ҡаласаҡ. Ә ҡасан ғына әле ул мейес эсендә, күмәк өйкөм араһында, баҙылдап яна ине!* Б. Бикбай. — *Түләмәй, бушҡа эшләтә тиһеңме? Ә хеҙмәт бөтөнләй буш төшә инде уға.* Һ. Дәүләтшина.

**10.** *и. мәғ.* Иғтибарға алырлыҡ булмаған эш, хәл, һүҙ, хәбәр. *Мөйылбикә: — Ҡуйсы, буш менән булмағыҙ, ҡарт кешене мәшәҡәтләп,— тиһә лә, үҙе ҡыҙыҡһынып көлә ине.* Һ. Дәүләтшина.— *Әһә, һиҙҙек эшеңде, һин тиктәҫкә йөрөмәйһең бит, егет,— тинеләр пекарнялағы иптәштәр.— Ҡуйығыҙ әле, бушты һөйләмәгеҙ, ауылдаш килгәйне, шуның янына барып ултырғайным,— тигән булдым.* Т. Йәнәби.

**11.** *р. мәғ.* Бер ниндәй маҡсатһыҙ, сәбәпһеҙ, былай ғына; тик.— *Ахыр сиктә сығып ҡастым, югиһә буш торғанда туҡмалыр инем шул.* Т. Хәйбуллин. *[Хөрмәт:] Ниңә көләһең? — Буш! — тине Исмәғил, ауыҙы ҡолағына еткәнсә йылмайып.* Я. Вәлиев.

♦ **Буш итеү** 1) хаҡын түләмәй ҡалдырыу. — *Инде, Ғәләү ҡустым, һин уны онота күр. Ундай һүҙҙе түрә барында әйтә күрмә, мин һине буш итмәм,— тип ялынды [Шәхми].* Т. Йәнәби; 2) насар итеү. *Бынан китеп буш итте ул.* **Буш ҡул** *йәки* **буш ҡул менән** бер нәмәһеҙ көйө, бер нәмә лә булмаған көйө. *Буш ҡул менән ҡайтыу.* ■ *Тәртип Ҡотлойов кеүек тәртипле кеше ҡунаҡҡа барғанда буш ҡул менән бармай бит инде. Ул, магазинға сығып, торт .. алырға булды.* Ә. Вәли. **Буш тегеләй** кемгәлер асыуланып янағанда әйтелә. *[Гөлзада — Барыйға:] Мин ул кешеңдең зиманын ҡалҡытырмын, буш тегеләй.* Ш. Насыров. **Бушты бушҡа бушатыу** файҙаһыҙ эш менән шөғөлләнеү.

**БУШ** [2] *диал. ҡар.* **бушаҡ** 1.

**БУШАҠ** *с.* **1.** Тығыҙ түгел, ҡыҫтау түгел. *Бушаҡ булыу. Шешәнең тығыны бушаҡ. // Бушаҡ бәйләү.*

**2.** *күсм.* Кешегә, ауырлыҡҡа ҡаршы тора алмаған йомшаҡ холоҡло. *Бушаҡ кеше.*

**БУШАЛАҒАЙЫМҒА** *р.* Кәрәкһеҙгә, бушҡа, буштан-бушҡа. *[Фәкиһә — балаларына:] Машинаны аслан бушалағайымға өйрөлтмәгеҙ, боҙоп ҡуйырһығыҙ.* Ж. Кейекбаев.

**БУШАН** *с. диал.* Һәлкәү.

**БУШАНЫУ** *ҡ.* **1.** Ниҙән дә булһа ҡотолоу; йырыныу, бушау. *Эштән бушаныу.* ■ *Әле Алпаров, көндөҙгө мәшәҡәттәрҙән бушанып, .. килгән хаттар менән таныша ине.* Я. Вәлиев. *Сыйныр быгауҙан бушанып ҡалғас, Алпамыша бер кирелеп ҡуйҙы, ти.* «Алпамыша».

**2.** *диал.* Ауырҙағы баланан ҡотолоу. *Бушанған ҡатын.*

**БУШАТҠЫС** *и.* Ниҙәлер бушата торған машина. *Иген бушатҡыс. Йөк бушатҡыс.*

**БУШАТТЫРЫУ** *ҡ. йөкм. ҡар.* **бушатыу** [1] 1, 2. *Утынды бушаттырыу.*

**БУШАТЫЛЫУ** *ҡ. төш. ҡар.* **бушатыу** [1] 1,2. *Бушатылған бесән.*

**БУШАТЫНЫУ** *ҡ. ҡайт. ҡар.* **бушатыу** [1] 1, 2.

**БУШАТЫУ** [1] *ҡ.* **1.** Эсен йәки өҫтөн буш ҡалдырыу, бушҡа әйләндереү. *Һауытты бушатыу. Вагонды бушатыу. Шешәне бушатыу.*

**2.** Йөктәге нәмәне алыу. *Ашлыҡты бушатыу. Көлтәне бушатыу. Утынды бушатыу.* / Ниҙәлер бер ерҙән икенсе ергә ауҙарыу. *Һөттө табаҡҡа бушатыу. Утынды кәртәгә бушатыу.* ■ *Был ҡыҙ бер көйәнтә һыу килтереп, сапсаҡҡа бушатҡан икән, аҡҡан да киткән* (Әкиәттән).

**3.** Китеп, буш ҡалдырыу. *Бүлмәне бушатыу.* ■ *[Ҡолморҙа:] Өс көн эсендә бер кем дә ҡалмай Сыуашбайға күсергә, байҙың алтын диләнкәһен бушатырға кәрәк.* Т. Хәйбуллин.

**4.** Эш, шөғөлдән арындырыу, буш итеү. *[Вася:] Күберәк йөрөргә мине баяр улы бушатмай, йә дядя Гриша.* Һ. Дәүләтшина. / Эште бөтөп, буш итеү. *Һәнәкте бушатыу.* ■ *Утынға барырға атты бушатмайҙар.*

**5.** Эш урынынан алыу; төшөрөү, сығарыу. *Көндәрҙең берендә Ирғәлиевты мин-минлектә, дәүләт байлығына һарауһыҙ ҡарауҙа ғәйепләп, эшенән бушаттылар.* Ш. Насыров.

♦ **Күңелде** (*йәки* **эсте**) **бушатыу** ҡайғыны баҫып, күңелде еңеләйтеү. *Йырлап эсте бушатыу.*

**БУШАТЫУ** [2] *ҡ.* Тығыҙ, ҡыҫтау хәлдән бушаҡ хәлгә килтереү. *Арҡанды бушатыу. Дилбегәне бушатыу.*

♦ **Теҙгенде бушатыу** талапты, ҡыҫымды кәметеү. *[Бригадир Тимергә:] Һин Фәхриҙең теҙгенен бушатыбыраҡ ебәрәһең булһа кәрәк. .. Ул артыҡ ышаныслы кеше түгел.* Б. Бикбай.

**БУШАТЫШЫУ** *ҡ. урт. ярҙамл. ҡар.* **бушатыу** [1] 1, 2. *Йөк бушатышыу. Вагон бушатышыу.*

**БУШАУ** [1] *ҡ.* **1.** Эсе йәки өҫтө буш ҡалыу, бушҡа әйләнеү. *Бушаған һауыт. Һандыҡ бушаны. Урам бушаны.* ■ *Тағы көҙ етте. Баҫыуҙар бушап, нисектер моңһоуланып ҡалды.* Ғ. Аллаяров.

**2.** Йөгө алынып, йөкһеҙ ҡалыу. *Бушаған вагон.*

**3.** Биләүсеһе китеп, буш ҡалыу. *Бушаған өй. Бушаған ултырғыс. Ятаҡта урын бушаны.*

**4.** Эш,шөғөлдән йәки берәй нәмәнән арыныу. *Ашауҙан бушамау. Кешенән бушамау. Эштән бушамау. Донъя мәшәҡәтенән бушамау.* / Эше бөтөп, кәрәкмәҫ булыу. *Быҫҡың бушағас, биреп торорһоң әле.*

♦ **Күңел бушау** *ҡар.* **күңел. Эс бушау** *шул уҡ* **күңел бушау** (*ҡар.* **күңел**).

**БУШАУ** [2] *ҡ.* **1.** Тығыҙ, ҡыҫтау хәлдән бушаҡ хәлгә килеү. *Арҡалығы бушаған.* ■ *Бөтәбеҙ ҙә машинанан төштөк. Беҙ ҡуйған тәгәрмәстең тыны тамам бушаған ине. Алмаш-тилмәш тын тултырҙыҡ.* Н. Нәжми.

**2.** *күсм.* Көс,көүәттән яҙыу; йомшау, хәлһеҙләнеү. *Нәфисә хәлһеҙләнде. Аяҡ быуындары бушап, тәне дерелдәй башланы.* Я. Хамматов.

♦ **Билғау аҫты бушау** *кар.* **билғау. Ҡурйын аҫты бушау** *шул уҡ* **билғау аҫты бушау** (*кар.* **билғау**).

**БУШҠА** *р.* **1.** Һис бер файҙаһыҙға, кәрәкһеҙгә; юҡҡа. *[Рәшиҙә:] Бушҡа аҡса түгеп, ваҡыт әрәм итеп, балаларҙы уҡытып йөрөүҙән ни мәғәнә сығыр икән?* М. Тажи.

**2.** Һис бер сәбәпһеҙ, нигеҙһеҙ. *[Зөлкәрнәй:] Ай-һай, бушҡа кешнәмәй торғайны.* Н. Иҙелбай. *[Балыҡ:] Бушҡа ҡайғырма, егет, мин һиңә ярҙам итәм* (Әкиәттән).

**3.** Һис бер түләүһеҙ; бушлай. *Бушҡа алыу.* ■ *[Бай:] Мин бушҡа нәмә биргәнем юҡ* (Әкиәттән).

**БУШЛАЙ** *р.* **1.** Бер ниндәй хаҡһыҙ, буш көйө. *Бушлай алыу. Бушлай биреү. Бушлай килгән мал.* ■ *— Ярай инде, улым, ундай шифер бушлай ҙа кәрәкмәй,— тип, Фәһимә апай был юлы ла баш тартты.* Д. Исламов.

**2.** Бер нәмәһеҙ көйө, буш ҡул менән.— *Бүләк тә алып килмәне, бушлай ғына хушлашырға уйлай.* С. Агиш.

**3.** Файҙалы эш башҡармай, буш көйө. *Моторҙы бушлай әйләндереп һынау.*

**БУШЛА́Т** [*рус.*] *и.* Буҫтау тышлы матрос курткаһы. *[Азаматтын] өҫтөндә .. еҙ төймәле сөм ҡара бушлат.* З. Рафиҡов.

**БУШЛЫҠ** *и.* **1.** Бер нәмәһе лә булмаған, буш киң арауыҡ. *Дала бушлығы. Икһеҙ-сикһеҙ йыһан бушлығы.* ■ *Көҙгө кеүек йылтырап, хәрәкәтһеҙ тынып ятҡан зәңгәр диңгеҙ бушлығында яңғыҙ ҡарап йөҙә.* З. Биишева. *Хәҙер инде был урындар төптө танымаҫлыҡ та: яңы гүзәл ҡала тыуған тып-тын ятҡан бушлыҡта.* Б. Бикбай.

**2.** Тотош материал эсендәге буш, ҡыуыш урын. *Ярыҡҡа ҡулды тығып тарттҡас, бер таш еңел генә ҡубып сыҡты. Эстә бушлыҡ. Егеттәр, башҡа таштарҙы ла алып, кеше үтеп инерлек тишек яһаны.* Ф. Лоҡманов.

**3.** *күсм.* Кешеләр йәки яҡын тигән берәйһе менән яҡындан аралашыу, ҡатнашыуҙың булмауы, яңғыҙлыҡ. *Ни эшләргә һуң? Көндө нисек уҙҙырырға, тормоштағы был ҡурҡыныслы бушлыҡты нимә менән тултырырға?* Ф. Әсәнов. *Бала һөйөү хисе янды унда, тәрән бушлыҡ тойҙо бөгөн ул. — Мин бала теләйем,— тине Сәйҙел,— миңә бала кәрәк,— тине ул.* Ғ. Сәләм.

**2.** *күсм.* Күңел төшөнкөлөгөнә бирелгәндәге хәл, ҡыҙыҡһыныу, ынтылыштарҙың булмауы. *Төнгө буш урамдағы яңғыҙлыҡтан уның [Арсла-новтың] кәйефе тағы ныҡыраҡ ҡырыла төштө. Күңел бушлығы, эс бошоу уның йәнен ҡыйҙы.* Д. Исламов. *Көтөлмәгән ниндәй минуттар был — әллә ниндәй бушлыҡ күңелдә. Әллә ҡайҙа кеүек һин дә, ул да, үҙем дә юҡ кеүек үҙемдә.* Н. Нәжми.

**БУШТАН** *р.* **1.** *һир.* Һис бер сәбәпһеҙ; буштан-буш. *Буштан асыуланыу.*

**2.** Көс түкмәй; анһат. *Белем буштан килмәй.*

**БУШТАН-БУШ** *р.* **1.** Һис бер хаҡ,түләүһеҙ; бушлай. *Буштан-буш биреү. Ергә буштан-буш хужа булыу.*

**2.** Һис бер сәбәпһеҙ, нигеҙһеҙ; тоҡ-томалға. *Буштан-буш бәйләнеү. Буштан-буш ғауға ҡуптарыу.*

**БУЯҠ** *и. кар.* **буяу** [2]. *Аҡ буяҡ. Зәңгәр буяҡ. Иҙән буяғы. Йөн буяғы.*

**БУЯЛЫУ** *к.* **1.** *төш. кар.* **буяу** [1]. *Буялған иҙән. Буялған күлдәк.* ■ *Һарыға буялған ҙур ишек ауыҙына килеп туҡтаным.* С. Агиш.

**2.** Тейеп бысрау; мансылыу. *Батҡаҡҡа буялыу. Ҡоромға буялыу.* ■ *Барыбыҙҙың да өҫтә онға буялып бөткән аҡ халат.* Т. Йәнәби. *Кухняһында эшләгәндә буялғанмын күмергә* (Бәйеттән). / Тейеп яғылыу. *Салбарына бысраҡ буялған. Ҡулына аҡбур буялған.* ■ *Еүешләнеп тәнгә ҡан буялған, күлдәктәре ҡанға мансылған.* Ғ. Мәсғүт.

**БУЯНЫУ** *к.* Биткә, күҙгә һ. б. кершән, буяҡ яғыу; биҙәнеү.

**БУЯТЫУ** *к. йөкм. кар.* **буяу** [1].

**БУЯУ** [1] *к.* **1.** Буяҡ менән ҡаплау. *Иҙәнде буяу. Иренде буяу.* / Буяҡҡа маныу. *Йөндө буяу. Күлдәкте буяу. Сәсте буяу.* ■ *Буяусылар клуб башын күҙ яуын алып торған йәшел буяуға буяй.* С. Агиш.

**2.** Бысраҡ менән ҡаплау; бысратыу. *Ҡейемде майға буяу.* ■ *Ҡайһы берәүҙәр яңы салбар, итектәрҙе һыулап, батҡаҡҡа буяп, борһалап, иҫке теҫ бирергә тырышты.* Д. Юлтый. *Тәгәрмәстән һирпелгән бысраҡ машинаның тәҙрәһен буяны.* Я. Хамматов.

♦ **Күҙ буяу** *кар.* **күҙ.**

● *Бер бысраҡ һыйыр бөтә көтөүҙе буяй.* Мәҡәл. *Яман әҙәм ил буяр.* Мәҡәл.

**БУЯУ** [2] *и.* **1.** Бер нәмәгә ниндәйҙер төҫ бирә торған матдә; буяҡ. *Иҙән буяуы. Ирен буяуы. Йөн буяуы. Сәс буяуы.* ■ *Өйҙөң эсе күгелйем аҡ буяуға, иҙәне һары буяуға буялған.* Ғ. Дәүләтшин.

**2.** Төҫ, биҙәк. *Тәбиғәт әллә нисә төрлө буяу менән биҙәлгән төҫлө.* М. Тажи. / *күсм.* Телмәрҙе, сәнғәт әҫәрен көсәйтә, байыта, биҙәй торған сара. *Лектор телмәрен асыҡ буяуҙар менән биҙәп, ҡыҙыҡ итеп һөйләй.*

**БУЯУСЫ** *и.* Буяу эше менән шөғөлләнгән эшсе. *Ала-ҡола алъяпҡыстар быуып, ҡулбаштарына бумала күтәреп, буяусылар .. ашығып атлай.* Ғ. Ғүмәр.

**БУЯШЫУ** *к. урт. ярҙамл. кар.* **буяу** [1] 1.

**БҮГЕҮ (бүк≠)** *к.* **1.** Күп ашап биҙеү. *Балдан бүгеү. Еләктән бүгеү. Ҡаҙынан бүгеү. Бүккәнсә ашау.*

**2.** *күсм.* Ныҡ ялҡыу. *Ҡунаҡтан бүгеү. Татлы һүҙҙән бүгеү.*

**БҮГӘН** *и.* Төптән ағарып, йыуан булып сыҡҡан ҡыҫҡа сәс.

**БҮГӘҮ** [1] *к.* Үтә алмаҫлыҡ итеп тотҡарлау; кәртәләү. *Беҙ уларҙың юлын бүгәнек. Бер ҡайҙа ла бара алманылар.* И. Көҫәпкол.

**БҮГӘҮ** [2] *и.* Үтә алмаҫлыҡ итеп ҡоролған тотҡар, кәртә. *Ағас йығып, юл ашаһына ҡапыл ғына бүгәүҙәр һалыр өсөн урын ҡаралды.* Ғ. Ибраһимов.

**БҮҘ** [*гәр.*] *и.* Эре итеп һуғылған аҡ мамыҡ туҡыма. *Аҡ бүҙ.* // *Бүҙ күлдәк.*

● *Аҡ мамыҡтан бүҙ сығыр, аҡыллынан һүҙ сығыр.* Мәҡәл. *Бохар даны менән бәҙ үтер, ата даны менанҡыҙ үтер.* Мәҡәл.

**БҮҘӘНӘ** *и.* Һорғолт сыбар төҫлө, оҙон ҡа-

натлы, ҡыҫҡа ҡойроҡло, күгәрсен ҙурлығындағы ялан ҡошо (итен ашайҙар); бытбылдыҡ. *Ата буҙәнә. Инә буҙәнә.* ■ *Ара-тирә «бытбылдыҡ, бытбылдыҡ» тип буҙәнә ҡысҡырғаны ишетелә.* Ә. Вәли. *Ялан ғына ере ай ҡылғанлыҡ, буҙәнәләр йүгерә түбәндә* (Халыҡ йырынан).

**БҮҘӘТӘҮ** *и. диал.* Бөрләтәү.

**БҮЖӘК** *с. диал. кар.* **сусаҡ** [1]. *Бужәк тау.*

**БҮКТЕРЕҮ** *к.* **1.** Күп ашағандан биҙҙереү. *Бал бүктерҙе.* ■ *— Эс эсетеп китте. Ни, ҡарағат тиҙ бүктерә икән, — тип, ауыр көрһөнөп ҡуйҙы Ҡыҙырас.* З. Биишева.

**2.** *күсм.* Ныҡ ялҡытыу. *Татлы һүҙҙәр бүктерҙе.* ■ *—Һалым? Күпме түләргә була? Алырын алып бөттөләр [тип шаулашты халыҡ], — Әйтмә инде. Бүктерҙе был донъя!..* Я. Хамматов.

**БҮКҺЕҮ** *к. диал.* Боҙолоп еҫләнеү; һөрһөү. *Ит бүкһегән.*

**БҮКҺӘ** [1] *и.* **1.** Ҡош ашҡаҙанының тәүге бүлеге; боғаҡ. *Тауыҡ өсөн күпме аҙыҡ бар! Күпме кәрәк — әйҙә сүпләһен, тултырғанса үҙенең бүкһәһен.* Н. Нәжми.

**2.** Күкрәктең юғарғы өлөшө, күкрәк башы. *Уның [Әхтәмдең] ҡаршыһында ғына бүкһәһен киреп.. Рух баҫып тора ине.* В. Исхаҡов.

**БҮКҺӘ** [2] *и.* Йыуан, тулы кәүҙә. *Зилский .. бер өйрәк бүкһәһен алдына алып, алдынан ҡалғанса тәмләп-тәмләп ашаны.* Ғ. Дәүләтшин. *Бына шунда сыкты һөрән һалып байҙың йыуан, һимеҙ бисәһе, уң ҡулына өлкән сумес алып, албаҫтылай булып бүкһәһе.* Х. Ғәбитов. / Төпөш, йыуан кешене әрләгәндә әйтелә.

**БҮКӘ** *и.* Туй ярыштарында еңгән кешегә бүләк итеп бирелгән һимеҙ, ҙур ит өлөшө.

**БҮКӘЙ** [*рус.* бука] *и. диал.* Бапаҡ.

**БҮКӘЙЛӘҮ** *к. диал.* Имгәкләү.

**БҮКӘН** *и.* **1.** Бүрәнәнән бысып алып ултыртылған ҡыҫҡа түмәр. *Сәхәү .. бүкәнгә балта менән сапкан һайын тирә-яғына ҡарап ала.* Р. Ғабдрахманов. **Ит бүкәне** 1) ит саба торған бүкән; 2) бик йыуан, төпөш кешегә ҡарата әйтелә.

**2.** Ергә ҡаҙып ултыртылған ҡыҫҡа ғына йыуан бағана. *Бүкән ултыртыу. Нигеҙ бүкәне.*

**3.** Ваҡ-төйәк ҡуя торған бәләкәй генә тәпәшәк дүрткел шкаф; тумбочка.

**4.** *диал.* Артһыҙ ултырғыс.

**5.** *диал.* Баулы балан. *Бер бүкән балан.*

**6.** *диал. кар.* **яҫтыҡ** 2.

**7.** *диал. кар.* **көпсәк** 1.

**8.** (*йәки* **еҙ бүкән**) Уйын исеме (балалар икешәрләп аллы-артлы түңәрәкләп баҫа; ике кеше түңәрәкте уратып баҫтырыша; ҡыуып етеп һуҡһа, үҙе ҡаса; ҡасҡаны һуғылмаҫ элек бер парҙың алдына барып баҫһа, арттағы бала ҡаса). *Бүкән уйнау.*

♦ **Бүкән баш** башы ҙур кешегә ҡарата әйтелә. **Бүкәнгә ултырыу** *диал.* быуынға ултырыу (*кар.* **быуын** [1]). **Күҙле бүкән** эшләмәй, ҡыбырламай тик ултырған кешегә ҡарата әйтелә.

**БҮКӘНЛӘҮ** *к. диал.* Баулау (баланды).

**БҮКӘШ** *с. диал.* Бик йыуан төпөш (кешегә ҡарата).

**БҮЛ** [1] *и. иҫк.* Ҡарындағы бала. — *Бүлле, бүлле, бүлле бүл, буҙәнәнән түлле бүл, ҡарлуғастан һылыу бүл, ыласындан өлгөр бүл* (Йола йырынан).

**БҮЛ** [2] [*рус.*] *и. һөйл.* Пуля.

**БҮЛБЕ** [*рус.* бульба ⟨ *пол.*] *и.* Үҫемлек тамырындағы йомарсаҡ. *Картуф бүлбеһе. Георгин бүлбеһе.*

**БҮЛБЕЛӘНЕҮ** *к.* Бүлбелегә әйләнеү, бүлбеле булыу.

**БҮЛГЕ** *и. анат.* Берәй эске ағзаның, ҡыуыш-лыҡтың ярыһы. *Йөрәктең ике яртыһы бүлге менән бүленгән.*

**БҮЛГЕЛӘНЕҮ** *к. төш. кар.* **бүлгеләү**.

**БҮЛГЕЛӘҮ** *к.* Өлеш-өлөшкә бүлеү. *Муйылбикә .. сөсө ҡымҙсте бүлгеләне лә, батмус тирәләй әйләндереп, ашъяулыҡҡа һалды.* Һ. Дәүләтшина.

**БҮЛГЕС** *и.* Берәй нәмәне бүлә, бүлеп оҙата торған ҡулайлама. *Газ бүлгес.* // *Бүлгес барабан.*

**БҮЛДЕРЕҮ** *к. йөкм. кар.* **бүлеү** [1]. *Икмәкте бүлдереү. Малды бүлдереү. Һыҙҙе бүлдереү.*

**БҮЛЕК** *и.* **1.** Бөтөндөң бүленгән бер өлөшө. *Шкафтың бүлеге. Портфелдең бер бүлеге.*

**2.** Китап, газетаның үҙенә башҡа бер йүнәлешле өлөшө. *Газетаның юмор бүлеге. Журналдың хроника бүлеге. Китаптың тәүге бүлеге.*

**3.** Төрлө тамашаның айырым бер өлөшө. *Концерттың икенсе бүлеге. Кисәнең тантана бүлеге.*

**4.** Ойошма йәки хужалыҡтың айырым бер тармағы. *Магазиндың гастрономия бүлеге. Фабриканың тәьминәт бүлеге. Факультеттың әҙәбиәт бүлеге. Кадрҙар бүлеге.* / Ниндәйҙер системаның айырым бер ойошмаһы. *Район ер бүлеге. Милиция бүлеге. Почта бүлеге.*

**5.** *диал.* Айырым бер төркөм.

**БҮЛЕКСӘ** *и.* Хужалыҡ һәм ойошманың айырым бер бәләкәй тармағы. *Совхоздың өсөнсө бүлексәһе.* / Ниндәйҙер системаның айырым бер бәләкәй ойошмаһы. *Элемтә бүлексәһе.*

**БҮЛЕМ** *и.* **1.** Үлсәү приборҙарының һыҙып бүленгән бер араһы. *Термометрҙың терегөмөшө бер бүлемгә күтәрелгән.*

**2.** *кар.* **бүлек** 1, 2.

**БҮЛЕНДЕ** *и.* Организмдан бүленеп сыҡҡан матдә; бүлендек. *Лемурҙар барған юлдарын үҙҙәренең еҫле бүлендeләре менән бысрата.* «Башҡортостан уҡытыусыһы», 1966, № 3.

**БҮЛЕНДЕК** [1] *и.* Бер һанды икенсе һанға бүлгәндән барлыҡҡа килгән һан.

**БҮЛЕНДЕК** [2] *и. кар.* **бүленде**.

**БҮЛЕНЕҮ** *к. төш. кар.* **бүлеү** [1]. *Бишкә бүленгән һан. Урталай бүленеү.*

**БҮЛЕНЕҮСЕ** *и. мат.* Икенсе бер һанға бүленә торған һан. *Уртаҡ бүленеүсе.*

**БҮЛЕНЕҮСӘНЛЕК** *и.* **1.** Бүленеү һәләте. *Күҙәнәктең бүленеүсәнлеге.*

**2.** *мат.* Бөтөн һандың башҡа һанға ҡалдыҡһыҙ бүленеү үҙенсәлеге.

**БҮЛЕНЕШ** *и.* Өлөш-өлөшкә, төркөм-төркөмгә тарҡалыш. *Йәмғиәттең синыфтарға бүленеше. Хеҙмәт бүленеше.*

**БҮЛЕП-ЯРЫУ** *к.* Өлөш, киҫәктәргә айырыу. *Бүлеп-ярып түләү.* ■ *— Аҡсаны уны бүлеп--ярһаң, бәрәкәте оса.* Һ. Дәүләтшина.

**БҮЛЕҮ** [1] *к.* **1.** Бөтөндән бер киҫәк йәки күмәктән бер төркөм айырыу. *Икмәк бүлеп алыу. Ҡарбузды бүлеү.* ■ *Үҙ йәнемде бүлеп бирер инем, йәндән башҡа йөрөр хәлем юҡ* (Халыҡ йырынан). / Киҫәк-киҫәккә йәки төркөм-төркөмгә айырыу. *Ҡунаҡтар дәрәжәһенә ҡарап бүлеп ултыртылған.* Т. Хәйбуллин. / Араға ниҙер ҡуйып айырыу. *Бүлмә бүлеү. Өйҙө таҡта менән бүлеү. Һарайҙы кәртә менән бүлеү.* ■ *Ике ҡаланы бер бейек тау бүлеп тора* (Әкиәттән).

**2.** Өлөш-өлөшкә айырыу. *Аш бүлеү. Малды бүлеү. Игенде бүлеү.* ■ *[Тайба] итте өлөшләп бүлергә кереште.* З. Биишева. *[Ҡарт] үҙе иҫән саҡта барлы-юҡлы мөлкәтен улдарына бүлеп бирмәксе булған* (Әкиәттән).

**4.** Организмдан, үҙенең составынан тышҡа бүлеп сығарыу. *Газ бүлеп сығарыу. Организмдағы артыҡ шыйыҡлыҡты бүлеп сығарыу.*

**5.** Эш-хәлде киҫеп туҡтатыу. *Йоҡоно бүлеү. Уйҙы бүлеү. Һүҙҙе бүлеү. Эште бүлеү.* / Хәрәкәтте тотҡарлап туҡтатыу. *Донъяның ағышын бүлеү.* ■ *Йәш һунарсы уның [летчиктың] ҡаршыһына сығып, юлын бүлде.* Х. Мохтар.

**БҮЛЕҮ** [2] *и.* Бер һанды икенсе һан иҫәбенә бүлеүҙән ғибәрәт булған математик ғәмәл. *Бүлеү билдәһе. Бүлеү ғәмәле. Кәсерле бүлеү.*

**БҮЛЕҮСЕ** *и. мат.* Икенсе бер һанды бүлә торған һан. *Иң ҙур уртаҡ бүлеүсе.*

**БҮЛЕШЕҮ** *к.* **1.** *урт. ҡар.* **бүлеү** [1] 1, 2. *Аш бүлешеү. Мал бүлешеү.*

**2.** Ниндәйҙер хәл, тойғоно уртаҡ итеп бергә кисереү; уртаҡлашыу. *Ҡайғыны бүлешеү. Шатлыҡты бүлешеү.*

**БҮЛК** *окш.* Тар муйынлы һауыттан шыйыҡлыҡ ҡойолғанда йәки һыу аҫтынан һауа ҡалҡҡанда сыҡҡан тауышты белдергән һүҙ. *Бүлк итеү.*

**БҮЛК-БҮЛК, бүлк тә бүлк** *окш.* Ҡабат-ҡабат бүлк иткән тауышты белдергән һүҙ. *Бүлк-бүлк итеү. Бүлк-бүлк килеү.* ■ *Уның [арбаның] артында тарттырып бәйләнгән ап-аҡ алюмин фляга ултыра. Фляга эсендә нимәлер бүлк-бүлк сайҡалып килә.* Й. Солтанов.

**БҮЛКЕЛДӘҮ** *к.* Бүлк-бүлк итеү, бүлк-бүлк килеү. *Бүлкелдеге сығыу.* ■ *Эт, бүлкелдәгән тауыштар сығара-сығара, башын тәрән кәстрүлгә тыҡты.* Ә. Бикчәнтәев.

**БҮЛКӘ** *и.* **1.** Бер бөтөн нәмәнең айырым бер өлөшө; бүлек, бүлкәс. *Тартманың бер бүлкәһе.* ■ *Артабан .. тауҙар китә. Тауҙарҙың бүлкәләре араһында тәрән уялар ята.* Ж. Кейекбаев.

**2.** Һыу йәки һауа карабындағы айырым герметик бүлмә.

◆ **Бүлкәле икмәк** ваҡ-ваҡ итеп йомарлап, бер табаға һалып бешергән әсе икмәк.

**БҮЛКӘЛӘНЕҮ** *к.* Бүлкә-бүлкә булып бүленеү, бүлкәле булыу. *Бүлкәләнгән йәшник.*

**БҮЛКӘЛӘҮ** *к.* Бүлкә-бүлкә итеп бүлеү, бүлкәле итеү. *Тартманы бүлкәләү.*

**БҮЛКӘС** *и. ҡар.* **бүлкә** 1.

**БҮЛКӘТ** *и.* **1.** *геогр.* Ер йөҙөнөң ике меридиан араһындағы өлөшө. *Бүлкәт ваҡыты.*

**2.** *геогр.* Ер йөҙөнөң айырым бер климатик зонаны тәшкил иткән өлөшө. *Уртаса бүлкәт. Һыуыҡ бүлкәт. Эҫе бүлкәт.* / Ер йөҙөнөң айырым тәбиғи үҙенсәлекле өлкәһе. *Сүллек бүлкәте. Таулыҡ бүлкәте.*

**3.** *эк.* Илдең үҙенсәлекле экономик өлкәһе. *Тариф бүлкәте. Хаҡ бүлкәте.*

**4.** *ҡар.* бүлкә 1.

**БҮЛМӘ** *и.* **1.** Өйҙөң, бинаның стена менән бүленгән айырым өлөшө. *Йоҡо бүлмәһе. Ҡунаҡ бүлмәһе. Эш бүлмәһе. Класс бүлмәһе. Бүлмә ишеге.* ■ *Сәгиҙә апай ишек төбөндәге фанер менән генә бүленгән бәләкәй бүлмәлә тора.* Я. Вәлиев. / Солаңды бүлеп ҡуйылған айырым өлөшө; кәзәнкә.

**2.** Ойошмаларҙың махсус бер бүлеге. *Милицияның балалар бүлмәһе.*

**БҮЛМӘЛӘТЕҮ** *к. йөкм. ҡар.* **бүлмәләү.** *Рәкиә апай йортто бүлмәләтте лә: — Һалҡындар төшә. Ауылдың йөрөп эшләй алмаҫһың,— тип Сәлимде лә индерҙе.* И. Ғиззәтуллин.

**БҮЛМӘЛӘҮ** *к.* Бүлмәгә бүлеү, бүлмәле итеү. *Йортто бүлмәләү.*

**БҮЛМӘЛӘШ** *с.* Бер бүлмәлә бергә йәшәгән. *Суфияның ҡайһы бер сәйер ҡылыҡтарына инде өйрәнеп бөткән бүлмәләш ҡыҙҙар һәр ҡайһыһы үҙ эшендә булырға, Суфияға иғтибар итеүҙәрен һиҙҙермәҫкә тырышты.* З. Биишева.

**БҮЛСӘР** *и. диал.* Балтыр.

**БҮЛТ** *окш.* **1.** Ҡапыл өрөлөп, ҡабарып сыҡҡанды белдергән һүҙ. *Ирене бүлт итте.*

**2.** *ҡар.* **бүлк.**

**БҮЛТ-БҮЛТ** *окш. ҡар.* **бүлк-бүлк.**

**БҮЛТЕК** *с.* Бүлт итеп торған, бүлтәйгән. *Үҙе ҡаптыра алмағынлыҡтан Зөбәйҙәнең бығасы йәне көйә, былай ҙа бүлтек ирендәрен балалар кеүек, нығыраҡ бүлтәйтә ине.* Н. Мусин.

**БҮЛТЕРЕК** *и.* **1.** Йәйгә, көҙгә ҡалып, һуңлап тыуған кәзә, һарыҡ бәрәсе; йәйлеүес, көҙләүес. // *Бүлтерек мал.*

**2.** Бүре балаһы.

**3.** *с. мәғ. кусм.* Кәгез, ябыҡ, буйға бәләкәй. *Буйы буйға етмәгән, үҙе ҡыҙҙар менән йөрөгән бүлә, бүлтерек.* Ә. Вәли.

**БҮЛТЕРЕКЛӘҮ** *к.* Йәйгә йәки көҙгә ҡалып, һуңлап бәрәсләү. *Һарыҡ бүлтерекләгән.*

**БҮЛТӘЙЕҮ** *к.* Өрөлөп, тумалаҡ ҡына булып ҡабарыу; тупайыу. *Уның [Насиптың] ике урты бүлтәйеп сыҡҡан. Күрәһең, ауыҙындағы икмәген сәйнәп бөтөрмәй ойоп киткән.* М. Кәрим. *Сәфәргәле бүлтәйеп кенә сығып килгән ҡорһағын һелкетеп кеткелдәне.* В. Нафиҡов.

**БҮЛТӘЙТЕҮ** *к.* Өрөлдөрөп, тумалаҡ итеп ҡабартыу. *Гөлнур ҡалын ирендәрен бүлтәйтеп, бәләкәй генә танауын йыйырған.* Ғ. Шәрипов. — *Ниңә бурҙайың көн дә китеп олаға ла, кискырын ғына ике бөйөрөн туптай бүлтәйтеп, ауыҙ-моронон ҡанйыратып ҡайтып инә?* Й. Солтанов.

**БҮЛТӘК** *и. диал. ҡар.* **бүлкә** 1.

**БҮЛӘ** [1] *и.* **1.** Бүлеп-бүлеп, ял итеп эшләгән эштең бер өлөшө; тына. *Бер бүлә эшләп алыу.*

**2.** Бер нисәгә бүлеп эшләнгән эштең бер өлөшө. *Ашлыҡты ике бүлә урыу.*

**БҮЛӘ** [2] *и.* **1.** Бер туған ҡатындарҙың балалары (бер-береһенә ҡарата).

**2.** Ейән йәки ейәнсәрҙең улы; өсөнсө быуын.

**БҮЛӘК** [1] *и.* **1.** Кешене шатландырыу өсөн һәм

яҡшы теләктәр менән бушлай бирелә торған нәмә. *Иҫтәлекле бүләк. Ҡәзерле бүләк. Бүләк биреү. Бүләк алыу. Бүләк өләшеү. Ярышта еңгәндәргә ҡиммәтле бүләктәр биреү.* ■ *[Зәйнәп:] Киткән кешеләргә кеҫә бүләктәре биреп ебәргәндә насар булмаҫ ине.* Н. Ҡәрип. *[Ғамир] атты яҡшы ҡараған өсөн Беренсе майҙа бүләк алды.* Б. Бикбай.

**2.** (*баш хәреф менән*) Ир-ат исеме.

**БҮЛӘК**[2] *и.* Бер төркөм йәки бөтөн нәмәнең бүленеп торған өлөшө; бүлкә.

◆ **Ала бүләк** үҙенә бер башҡа, үҙенә бер төрлө. *Этколдоң өйө әллә ҡайҙан матурлығы, байлығы менән ауылдағы башҡа өйҙәрҙән ала бүләк булып айырылып тора.* Ғ. Дәүләтшин.

**БҮЛӘК**[3] *и.* Ер уртаһындағы, тау битендәге өйкөм ағаслыҡ.

**БҮЛӘКЛӘНЕҮ** *ҡ. төш. ҡар.* **бүләкләү.** *Аҡса менән бүләкләнеү. Миҙал менән бүләкләнеү.*

**БҮЛӘКЛӘҮ** *ҡ.* Бүләк биреү. *Ҡиммәтле бүләк менән бүләкләү. Орден менән бүләкләү. Миҙал менән бүләкләү.*

**БҮЛӘР** *и.* Башҡорттоң бер ырыуының исеме.

**БҮЛӘСӘР** *и.* **1.** Бер туған ҡатындарҙың балалары (бер-береһенә ҡарата).

**2.** Ейән йәки ейәнсәрҙең ҡыҙы; өсөнсө быуын.

**БҮНӘТӘЙ** [*рус.* понятой] *и.* Тентегәндә, мөлкәтте яҙғанда шаһит итеп саҡырылған кеше. *Ауылда тентеү башланды, ауылдың төрлө мөйөшөнә һалдаттар менән бүнәтәйҙәр йүгерҙе.* С. Агиш.

**БҮРЕ** *и.* **1.** Эт нәҫеленән булған ҡырағай йыртҡыс йәнлек. *Ата бүре. Күк бүре. Бүре өңө. Бүре балаһы. Бүре олой. Бүре һуғыу.* ■ *[Хәйруш:] Бүре тартҡан бер ҡолоҡайы өсөн бай минең башымды һуғып ярҙы.* Ҡ. Даян. **Яллы бүре** өйөр башлап йөрөгән ҡарт бүре.

**2.** *с. мәг.* Шул йәнлектең тиреһенән тегелгән. *Бүре толоп. Бүре яға.*

**3.** Уҫал, яуыз кешегә ҡарата әйтелә.

◆ **Бүре алғыр** (*йәки* **ашағыр**) эрләгәндә, ҡарғағанда әйтелә. **Бүре ауыҙ** ерле юҡҡа ауыҙ күтәреп илаған балаға әйтелә. **Бүре ауыҙынан үткәреү** төрлө им өсөн кешене бүренең тунап алып, киң итеп киреп киптерелгән ауыҙ тиреһе эсенән үткәреү. **Бүре бауыр** *ҡар.* **бауыр. Бүре баш** *диал. ҡар.* **бөгәзе** 1. **Бүре башы ашарҙай булыу** *ҡар.* **ашау.** *Бүре башы ашарҙай булып ҡайтыу.* **Бүре eләге** *ҡар.* **eләк** 1. **Бүре емеше** миләүшә сәскәле, сағыу ҡыҙыл емешле, ваҡ сейә япраҡлы урманлы тау ҡыуағы. **Бүре көпшәһе** *диал.* айыу көпшәһе (*ҡар.* **көпшә** 1). **Бүре сейәһе** *шул уҡ* **эт сейәһе** (*ҡар.* **сейә**). **Бүре табан** ҡорама биҙәктең бер төрө. **Бүре тырнағы** *ҡар.* **тырнаҡ. Бүреһе олоу** ҙур табыш, файҙаға осрау. **Бүре һырғағы** *диал.* аҡман-тоҡман. **Бүре ыуы** *диал.* сабыртҡы. **Ҡарт бүре** күпте күреп, йышылған кешегә ҡарата әйтелә. *[Ҡотлояр:] Һеҙ әле мине, ҡарт бүрене, алдамаҡсы булаһығыҙмы әле. Мин һеҙҙең кеүекте күрмәгәнме?* Һ. Дәүләтшина. **Сүл бүреһе** ваҡ ҡош-йәнлек, емтек ашай торған шырт йөнлө, ерән төҫлө ваҡ бүре (йылыраҡ яҡта, сүллектә, далала була). **Эстә бүреләр олоу** бик ныҡ асығыу.

**БҮРЕБАҪАР** *и.* Бүрегә һунар итә торған эре, көслө эт.

**БҮРЕК** *и.* **1.** Һырып, тышлап тегелгән йылы баш кейеме. *Илтер бүрек. Ҡама бүрек. Ҡаракүл бүрек. Ҡуян бүрек. Ҡолаҡсынлы бүрек.* ■ *Салауат нисә йәшендә, йәшел ҡамсат бүрке башында* (Халыҡ йырынан). **Йәйге бүрек** тиреһеҙ һырып тегелгән йомро бүрек. **Ҡасим бүрек** түбәһенә бәрхәт, ирнәүенә тека итеп бәрәс тиреһе тотолған ҡолаҡһыҙ түңәрәк бүрек. **Ҡырма бүрек** бәрәс тиреһенән бейек, түңәрәк итеп тегелгән ҡолаҡһыҙ бүрек. **Меҫкен бүрек** эсе йорон, ҡырпыуһыҙ, ҡолаҡһыҙ, йомро бүрек. **Сөннәтле бүрек** ғәҙәттә сәллә аҫтынан кейә торған ҡамалы бүрек. *Йәшерәктәре сөннәтле бүректәрен ҡырын кейеп, көнбағыш яра.* А. Таһиров. **Тәүәккәл бүрек** сите бәрәс тиреһе менән ҡырпылып, бәрхәт буҫтау менән тышланған йомро бүрек. *[Өмөтбай] башына сите бәрәс тиреһе менән тирәсләнгән иҫке тәүәккәл бүрек кейгән.* Ғ. Дәүләтшин. **Шымтырый бүрек** *диал. ҡар.* **меҫкен бүрек.**

**2.** Ҡайһы бер ҡоштарҙың түбәһендәге өлтәйеп торған йөнө; супай. *Бүрекле тауыҡ.* ■ *Күк күгәрсенкәйҙәрҙең күркенә, ҡаран торҙом йәшел бүркенә* (Халыҡ йырынан).

- ◆ **Бүрек алыу** туйға килгән ҡоҙаларҙың юлына ҡаршы сығып, бүректәрен талау (ҡоҙа хаҡ түләп кире ала). **Бүрек менән кәңәшләшеү** үҙ алдыңа уйлап, ҡарар итеү. **Бүрек сөйөү** баш кейемен юғары ырғытып, хуплау, ҡотлау. *Улар-ҙы [Салауаттарҙы] халыҡ солғап алған... Ҡылыс, һөңгө күтәреп, кәпәс сөйөп, батырҙарҙы ҡотлайҙар.* М. Кәрим. **Бүректә үҫкән** ҡара эшкә ярамаған, кәгез кешегә әйтелә. **Бүркен тышлау** кәрәген биреү, дөмбәсләү. *[Халыҡ — управляющий хаҡында:] Бүркен тышлап алырға кәрәк әҙерәк! Аҙау тештәрен ҡойорға! Һелтә берәрҙе!* А. Таһиров.

**БҮРЕКБАШ** *и.* Ҡыҫҡа һабаҡлы сөрөшөп торған башлы көрән бәшмәк.

**БҮРЕКСЕ** *и.* Бүрек тегеүсе. *[Хәтмулланың] атаһы Насип ҡарт, ғүмер-ғүмергә игенсе булып йәшәүе өҫтөнә, ауылда оҫта итексе һәм бүрексе лә ине.* «Ағиҙел», 1971, № 2.

● *Баш барҙа бүрексе бөтмәҫ, аяҡ барҙа итексе бөтмәҫ.* Мәҡәл.

**БҮРЕСЕ** *и.* Бүре һунарсыһы.

**БҮРЕҪ** *с. диал.* Яһил. *Бүреҫ кеше.*

**БҮРЕ-ҺӘРЕ** *и. йыйн.* Бүре һәм башҡа йыртҡыс йәнлек. *[Ибраһим — көтөүселәргә:] Иллә-мәгәр йоҡоғоҙға баш булығыҙ, бүре-һәре йәбешмәһен.* Й. Мостафин.

**БҮРЛӘТӘҮ** *и. ҡар.* **бөрләтәү.**

**БҮРТЕНЕҮ** *ҡ.* **1.** *ҡар.* **бүртеү** 1, 2. *Ирене бүртенгән. Ҡан тамыры бүртенгән.* ■ *Кәмә ямғыр һыуын эсеп, бүртенеп киткән.* К. Мәрғән.

**2.** *күсм.* Асыуҙан, оялыуҙан, көсөргәнеүҙән биткә ҡан йүгереп тулышыу. *Халыҡ оҙаҡ ҡул сапты. Әхмәт кенә ҡырын ҡарап, бүртенеп ултырҙы.* Б. Хәсән.

**БҮРТЕҮ** *ҡ.* **1.** Эстән тулышып тиртеү; бүртенеү, ҡабарыу. *Ҡан тамырҙары бүртә. Ирене бүртеп китә. Бүртеп сығыу.*

**2.** Дым тартып, күләме ҙурайыу. *Дымланып бүртеп киткән шинелдәр һаман ауырая.* Ф. Исәнғолов. *Ә ярма бүрткән дә бүрткән ти, ярма бүрткәс, сүлмәк тулып киткән, ти* (Әкиәттән).

**3.** Һутҡа, дымға тулышып, моронларға йәтешләү (бөрөгә, орлоҡҡа ҡарата). *Сәпсектәрҙең сипылдашыуында, бына бүртәм, бына бүртәм, тип торған бөрөләрҙә..— бөтә нәмәлә яҙ тыны һиҙелә.* З. Хисмәтуллин.

◆ **Ҡыҙара бүртеү** ҡанға тулышып ҡыҙарыу. *Ҡыҙара бүртеп ултырыу.* ■ *Ҡымыҙ эсеп, ҡыҙара бүртеп, ҡыҙҙар һөйгөң киләме?* (Халыҡ йырынан).

**БҮРТЛЕК** *и.* Өйҙөң ҡыйыҡ эсе.

**БҮРТЛЕКСӘ** *и. диал.* Бүртлек.

**БҮРТЛӘС** *с.* Бүртеп, ҡабарып торған; ҡабарынҡы. *Бүртләс ирендәр өҫтөндә мыйыҡ ярып сыға башлаған егет кенә ине әле Сабирьян ул саҡта.* М. Хәйҙәров.

**БҮРТМӘС** [1] *с.* **1.** Бүртеп-бүртеп торған бөрсөклө. *Бүртмәс яулыҡ.*

**2.** Бүртеп, бүлтәйеп сыҡҡан; күпкәк. *Бүртмәс ҡорһаҡ.*

**БҮРТМӘС** [2] *и. диал.* Ҡуянтубыҡ.

**БҮРТТЕРЕҮ** *к.* **1.** Һыуға һалып йомшартыу (борсаҡ, ярма кеүек нәмәне). *Борсаҡ бүрттереү. Дөгө бүрттереү.*

**2.** Һутҡа, дымға тулыштырып, моронлау хәленә еткереү. *Орлоҡто бүрттереү.*

**БҮРТӘ** *с.* **1.** Аҡ менән туры ҡатнаш (йылҡы төҫөнә ҡарата). *Бүртә бейә.* ■ *Арҡаларҙа уйнай бүртә атым, туғайҙарҙа уйнай туры атым* (Халыҡ йырынан).

**2.** *и. мәғ.* Шул төҫтәге ат. *Хәсән кешнәп торған бүртәне егә башланы.* С. Агиш. **Күк бүртә** аҡ төҫө еңеңкерәгән бүртә. *Күк бүртә таҡыр юл буйлап һалмаҡ ҡына юрта.* И. Нуғмәтуллин.

**БҮРТӘЙЕҮ** *к. ҡар.* **бүлтәйеү.**

**БҮРӘНӘ** [*рус.* бревно] *и.* Ҡырҡып, боталған оҙон йыуан ағас. *Бүрәнә башы. Өй бүрәнәһе. Таҡта бүрәнәһе. Бүрәнә һаллау. Бүрәнә әрсеү.* // *Бүрәнә күпер. Бүрәнә өй.*

◆ **Артыҡ бүрәнә [башы]** кәрәкмәгән артыҡ кешегә ҡарата әйтелә. *[Ҡормой:] Ярар, мин китәйем инде, артыҡ бүрәнә башы булмайым.* Б. Бикбай. **Бүрәнә үтә бүре күреү** белмәгән, күрмәгән көйө белгән булып һөйләү.

● *Бүрәнә тартһаң, өй була.* Мәҡәл.

**БҮРӘНӘСЕ** *и. диал.* Һалсы.

**БҮРӘТ** *и.* Бүрәт АССР-ының төп халҡын тәшкил иткән милләт һәм шул милләттең бер кешеһе (монгол телдәренең береһендә һөйләшә). *Бүрәт халҡы. Бүрәт теле. Бүрәт ҡатыны.*

**БҮҪЕЛДЕРЕҮ** *к.* Ауырлыҡ, көс баҫымы менән ишеү, емереү. *Ҡыйыҡты бүҫелдереү.* / Ҙур итеп үтәнән үтәгә йыртыу, ярыу. *Күлдәкте бүҫелдереү.*

**БҮҪЕЛЕҮ** *к.* **1.** *төш. ҡар.* **бүҫеү** 2.

**2.** Ауырлыҡ, көс баҫымынан ишелеү, емерелеү. *Тик бүҫелеп төшкән ҡыйығының һаламдарын йолҡоп ел олой.* Р. Ғарипов. / Ҙур булып үтәнән-үтә йыртылыу. *Иләк бүҫелеп төшкән.* ■ *— Күлдәгең бүҫелеп сыҡҡан бит,— тине Рәшит, арҡама күрһәтеп. Ысынлап та күлдәк уң яҡ яурынынан алып бүйҙан-бүйға йыртылған ине.* Ш. Насыров.

**3.** Тишек, йыртыҡтан ҡыҫылып тышҡа тибеү; бытлығыу. *Йыртыҡтарынан йөндәре бүҫелеп сыҡҡан бер-ике мендәр ята.* Ғ. Ғүмәр.

**4.** *күсм.* Тулышып, һытылырҙай булыу; өрөлөү. *Бүҫелеп торған елкә. Бүҫелгәнсә ашау.*

**5.** *күсм.* Саманан артыҡ мул булыу. *Иген бүҫелеп үҫкән.*

**БҮҪЕР** *и.* Эс итен тишеп, тире араһына бүлтәйеп эсәк сыға торған ауырыу. *Бүҫер ҡалҡыу. Бүҫер сығыу.*

**БҮҪЕРЕЛЕҮ** *к. ҡар.* **бүҫелеү.**

**БҮҪЕРЕҮ** *к. ҡар.* **бүҫеү.**

**БҮҪЕҮ** *к.* **1.** Ауырлыҡ, көс баҫымы менән ишеү, емереү. *Ҡыйыҡты бүҫеү.* / Ҙур итеп үтәнән-үтә йыртыу, ярыу. *Күлдәкте бүҫеп сығарыу.* ■ *[Сәлим — Кәримгә:] Бынан һуң ҡул һуҙаһы булһаң, апара ҡорһағыңды бүҫер ҙә төшөрөрмөн.* И. Ғиззәтуллин.

**2.** *күсм.* Кәрәген биреп туҡмау; бешеү. *Дошманды штык менән бүҫеү.*

**3.** *күсм. һөйл.* Бик ныҡ, бик күп итеп бер нәмә атҡарыу; бешеү. *Икмәкте бүҫеү.* ■ *[Аҫылгужа:] Аба, ҡарсыҡ, йоҡоно бүҫтем, ахыры. Сәғәт нисә?* Б. Бикбай.

**БҮҪКӘ** *с.* Тулынан ҡайтыш, тулыр-тулмаҫ. *Бүҫкә һауыт. Бүҫкә булыу. Бүҫкә итеп ҡойоу.*

**БҮҪКӘРЕҮ** *к.* **1.** Тулынан ҡайтыш булып ҡалыу, бүҫкәгә әйләнеү. *Ҡаҙандағы аш тиҙ бүҫкәрҙе.* Ш. Янбаев. *Улар алмашлап эсә башланы. Көрәгә бүҫкәрҙе.* Ж. Кейекбаев.

**2.** *күсм.* Бер аҙ кәмеү, аҙайыу. *Ошо ла йырҙы йырланиһәм, күп хәсрәтем, ҡайғым бүҫкәрә* (Халыҡ йырынан).

**БҮҪКӘРТЕҮ** *к.* **1.** Тулынан ҡайтыш итеү, бүҫкәгә әйләндереү. *Самауырҙы бүҫкәртеү.*

**2.** *күсм.* Бер аҙ кәметеү, аҙайтыу. *Йәнтимерҙең .. бына ошо сикәләренә сал төшкән олпат кеше менән эс серҙәрен уртаҡлашаһы килде, уға үҙенең уй, хәсрәтен һөйләп, тулышып барған бойоҡ күңелен бүҫкәртергә теләне.* Ғ. Вәлиев.

**БҮТЕК** *с. диал. ҡар.* **телһеҙ** 1.

**БҮТЕКЛӘНЕҮ** *к. диал.* Телһеҙләнеү.

**БҮТӘГӘ** [1] *и.* **1.** Өйкөм-өйкөм булып түшәлеп үҫкән ваҡ ҡына ҡыяҡ япраҡлы ялан үләне. *Бүтәгәле ялан.* ■ *Тауҙа боронораҡ ҡоралай, боландар күнаҡ булған, уның һутлы бүтәгәһен ашаған.* Б. Хәсән.

**2.** *диал.* Яңы шытып сыҡҡан йәш үлән.

**3.** *с. мәғ. диал.* Тәбәнәк, тәпәшәк. *Бүтәгә кеше. Бүтәгә сейә.*

**БҮТӘГӘ** [2] *и. диал.* Бөрләтәү.

**БҮТӘГӘЛЕК** *и.* Бүтәгә үҫкән ер. *Осо-ҡырыйы юҡ тип-тигеҙ дала... Әремлек, уйым-уйым бүтәгәлек, ҡылған.* И. Көҫәпҡол.

**БҮТӘН** *с.* **1.** Икенсе төрлө; башҡа. *Бүтән һүҙҙәр әйтеү.* ■ *Көршәк .. шул тәү ныгытылған көйө ултыра! Тик ҡултамғаһы ғына бүтән!* З. Биишева. *[Аҡйегет:] Һыртына әйәр теймәгән байтал кеүек ҡырыҫ инең быға тиклем һин, Зөбәржәт. Бөгөн бөтөнләй бүтәнһең.* М. Кәрим.

**2.** Бынан икенсе; башҡа. *Бүтән ил.* ■ *Гөлбоҫтан да бөгөн ни өсөндөр бүтән көндәрҙәге кеүек асыҡ, көләс йөҙлө түгел.* Ғ. Дәүләтшин. *[Сын-*

*булатов:] Януҙаҡ ағай, һин ҡыҫҡараҡ тот, бүтәндәр ҙә һөйләһен!* М. Тажи. — *Ә һуң аҙаҡ Әхмәт ҡайҙа киткән? — Әйтә алмайым,— тине, бүтәнен.* Ғ. Сәләм.

**3.** *р. мәғ.* Бынан ары, бынан башҡа; башҡа. *Айбулат бүтән өндәшмәне.* Һ. Дәүләтшина. *Ҡарт итте һоғонған да: «Тағы бир!» тигән. «Бүтән бирә алмайым: алты иптәшем бар, улар хәҙер ҡайта»,— тигән Ертыңлар* (Әкиәттән).

**4.** *бәйл. функцияһында* Сығанаҡ килештәге һүҙҙәр менән килеп, **«башҡа», «тыш»** мәғәнәһен бирә. *Яткан урынынан ара-тирә өрөп ҡалған эттәрҙән бүтән ауылдың тынлығын боҙоусы булманы.* Б. Ишемғол. *Аяҡлы-ҡуллы тигәнем, йылан итеп күргәнем бейҙән бүтән ни булыр?* (Ҡобайырҙан).

**БҮТӘНСӘ** *р.* **1.** Бүтән төрлө, икенсе бер төрлө; башҡаса. *Хәҙер уйҙар ҙа, теләктәр ҙә бүтәнсәрәк — киңерәк, коласлырак.* З. Биишева. *Бағда осҡан күбәләк тик гөлгә ҡауышыуҙы белә, ул бүтәнсә нә уҫал уй, нә лә шау-шыуҙы белә?* Ш. Бабич.

**2.** *ҡар.* **бүтән** 3. *Бейеүселәр сәхнәгә бүтәнсә сыҡманы.* Ғ. Әмири.

**БҮТӘНСӘЛӘЙ** *р. диал. ҡар.* **бүтән** 3.

**БҮШМӘН** *и.* Бөтә Көньяҡ Африканың бик боронғо төп халҡы һәм шул халыҡтың бер кешеһе (хәҙерге ваҡытта Көньяҡ һәм Көнсығыш Африкала йәшәгән ҡәбиләләр). *Бушмән халҡы. Бушмән ҡатыны.*

**БЫҒАСА** *р.* Быға тиклем, әлегә тиклем; әлегәсә. *Доклад шул урынға еткәс, быгаса .. хәрәкәтһеҙ ултырған Әмирханов урынынан ҡалҡа биреп, артҡа ҡараны.* С. Агиш. *Быгаса йоҡлап ятҡан дейеү ҙә ажғырып килеп сыҡҡан* (Әкиәттән).

**БЫҒАУ** *и.* **1.** Тотҡондағы кешенең аяҡ-ҡулына кейҙерә торған тимер ҡоршау. *Быгау һалыу // быгаулау.* ■ *[Миңнегәлиев:] Батша түрәләре аяҡ-ҡулына быгау һалһаң да* (Халыҡ йырынан). / Яланға ебәргәндә аттың алғы аяғына кейҙереп йоҙаҡлай торған тимер тышау. *Быгау асҡысы.* ■ *Күк болонда күк аргымаҡ йөрөй утлап, бәкәлендә ҡорос быгау бөткән тутлап.* Ә. Әхмәтҡужин.

**2.** *күсм.* Иректе, ихтыярҙы быуған нәмә; сынйыр. *Ҡоллоҡ быгауы.*

**БЫҒАУЛАНЫУ** *ҡ. төш. ҡар.* **быгаулау.** *Быгауланган ат.*

**БЫҒАУЛАТЫУ** *ҡ. йөкм. ҡар.* **быгаулау.** *Батша һалдатты быгаулатып, биклэп ҡуя* (Әкиәттән).

**БЫҒАУЛАУ** *ҡ.* Бығау менән ҡоршау. *Аяҡты быгаулау.* ■ *[Миңнегәлиев:] Батша түрәләре беҙҙең кеүек эшселәрҙе быгаулай.* А. Таһиров. / Бығау менән тышау. *Атты быгаулап ебәреү.*

**БЫҒЫМ** *и.*, **быгым ҡабырға** Күкрәк һөйәгенә тоташмаған йомшаҡ ҡабырға. *Быгым ҡаҙыһы. Быгым һөйәге.*

**БЫҒЫР-БЫҒЫР** *оҡш.* Ҡуйы нәмә ҡайнағанда, ҡайнаған кеүек һауа урғылғанда сыҡҡан тауышты йәки ауыҙ эсенән әйтелгән аңлайышһыҙ тауышты белдергән һүҙ; буғыр-буғыр. *Ул арала ут өҫтөндә ултырған сәйнүк тә быгыр-быгыр ҡайнап, ҡапҡасты сылтырата башланы.* М. Ғафури. *Таҙҙың ағалары таш табып алып, түңгәк тултырылған тоҡтоң ауыҙына бәйләй ҙә һыуға ташлай. Тоҡ быгыр-быгыр килеп һыуға бата* (Әкиәттән).

**БЫҒЫРЛАҠ** *с. диал.* Бупылдаҡ.

**БЫҒЫРЛАТЫУ** *ҡ.* Быгыр-быгыр иттереү, быгыр-быгыр килтереү; буғырлатыу.

**БЫҒЫРЛАУ** *ҡ.* Быгыр-быгыр итеү, быгыр-быгыр килеү; буғырлау. *Был кеше ниҙер быгырлап, .. Сабира апай баҡсаһына ыңғайланы.* Ф. Иҫәнғолов. *Таганга аҫылган биҙрәлә быгырлап бәрәңге ҡайнаны.* Р. Низамов.

**БЫҒЫУ** [1] (быҡ*г*) *ҡ.* **1.** Тандыр утта томаланып бешеү. *Ит быга. Кәбеҫтә быга. Быгып бешеү.*

**2.** Боҫҡа, ҡайнар һыуға бешеп йомшау.

**3.** *диал.* иҙрәү [1] 1. *Быгып йоҡлап китеү.*

◆ **Борсаҡ быгыу** *шул уҡ* **борсаҡ бешеү** (*ҡар.* **бешеү** [1]).

**БЫҒЫУ** [2] (быҡ*г*) *ҡ. диал.* Ылығыу. *Кешегә быгыу.*

**БЫҘАУ** *и.* **1.** Ярты йәшкә тиклемге һыйыр малы. *Быҙаулы һыйыр. Оргасы быҙау. Үгеҙ быҙау. Быҙау ҡарау.* ■ *— Му-му-му,— тип һыйыр менән быҙауҙары йөрөй.* Ш. Бабич. / Шул уҡ йәшкә тиклемге болан, мышы балаһы.

**2.** *күсм.* Йомшаҡ, йыуаш кешегә ҡарата әйтелә. *[Йәмлихә:] Мин булмаһам, был булдыҡһыҙ, быҙау .. арҡыры ятҡанды буй алып һала белмәҫ ине.* Ғ. Әхмәтшин.

◆ **Тил быҙау** *ҡар.* **тил** 2. **Ужым быҙауы** *ҡар.* **ужым.**

**БЫҘАУЛАТЫУ** *ҡ. йөкм. ҡар.* **быҙаулау.**

**БЫҘАУЛАУ** *ҡ.* Быҙау килтереү. *Хөрмәт ҡарттың һыйыры игеҙәк быҙау быҙаулаган.* З. Хисмәтуллин.

◆ **Елгә еленләп, боҙға быҙаулау** *ҡар.* **ел.**

**БЫҘ-БЫҘ** *оҡш.* Саҡ ҡына күренеп ҡалған утты, яҡтыны белдергән һүҙ. *Шәм уты быҙ-быҙ килеп яна. Быҙ-быҙ итеү. Быҙ-быҙ килеү.* ■ *Айһыҙ төндә ергә арҡа терәп, күк ҡашмауын ҡарап ятаһың. Быҙ-быҙ янган тере йондоҙҙарҙы ҡулың менән һәрмәп тотаһың.* Й. Солтанов.

**БЫҘЛАТЫУ** *ҡ.* **1.** Быҙ-быҙ иттереү. *Быҙлатып яндырыу.*

**2.** *күсм.* Ут кеүек яндырыу (күҙҙе). *Ул шатлыҡтан күҙҙәрен быҙлатып ебәрҙе.*

**БЫҘЛАУ** *ҡ.* **1.** Быҙ-быҙ итеү, быҙ-быҙ килеү. *Быҙлап яныу.* ■ *Көл уртаһында быҙлап ятҡан ваҡ ҡына тиҙәк күҙҙәры аяҡты бешерә.* Һ. Дәүләтшина.

**2.** *күсм.* Ут һымаҡ яныу (күҙгә ҡарата). *[Бесәйҙең] күҙҙәре ҡот осҡос, йәшелле-зәңгәрле төҫкә быҙлап тора.* Я. Вәлиев.

**БЫҘЛАУЫҠ** *и.* Төнөн быҙлап яҡтырып йөрөгән бәләкәй генә ҡуңыҙ.

**БЫҘЫҒЫУ** (быҙыҡ*г*) *ҡ. диал.* Бызмырлау.

**БЫҘЫҠ** *и. диал.* Һуҡыр шәм (*ҡар.* **шәм**).

**БЫҘЫЛДАУ** *ҡ. ҡар.* **быҙлау.**

**БЫЖАНЛАУ** *ҡ. диал.* Сыпранлау.

**БЫЖ-БЫЖ** *оҡш.* Ҡурай өргәндә йәки ҡаты ел иҫкәндә һ. б. сыҡҡан тауышты белдергән һүҙ. *Быж-быж итеп ҡурай өрөү.*

**БЫЖҒЫРТЫУ** *ҡ.* Нык итеп орошоу; ҡыҙҙырыу. *[Ябубаҫар:] Тапҡандар әкиәт һата торған урын, әйтерһең, мин бүрәнәне улар өсөн өйөп*

*куйғанмындыр. Ғәйнулла .. булмаһа, бөтәһен дә быжғыртып ҡыуып ебәрер инем.* С. Агиш. *Хәким балаларын быжғыртты: — Нимәштәп утыраһығыҙ бында ҡукрайып? Китегеҙ бынан!..* Я. Хамматов.

**БЫЖҒЫТЫУ** *к. диал.* Быжғыртыу.

**БЫЖҠ** *окш.* Өйрәк ҡысҡырғанда сыҡҡан тауышты белдергән һүҙ. *Өйрәк быжк итеп ҡысҡырҙы.*

**БЫЖҠ-БЫЖҠ** *окш.* Ҡабат-ҡабат быжҡ иткән тауышты белдергән һүҙ. *Өйрәктәр быжк-быжк килә.*

**БЫЖҠЫЛДАТЫУ** *к. йөкм. кар.* **быжҡылдау.** *Өйрәкте быжкылдатыу.*

**БЫЖҠЫЛДАУ** *к.* Быжҡ-быжҡ итеү, быжҡ-быжҡ килеү. *Быжкылдығы сығыу.* ■ *Урам яҡтан быжкылдап, балаларын эйәртеп өйрәктәр кайтып килә.* С. Агиш.

**БЫЖҠЫЛДАШЫУ** *к. урт. кар.* **быжҡылдау.**

**БЫЖЛАУ** *к. диал.* **1.** *кар.* **шыжлау.** *Самауыр быжлап ултыра.*

**2.** *кар.* **бызырлау** 1.

**БЫЖМЫР** *с. диал.* Бызмыр.

**БЫЖЫҠ** [1] *с.* Йылыла оҙаҡ ятып йомшарған. *Быжык картуф. Быжык кишер. Быжык шалкан.*

**БЫЖЫҠ** [2] *и. диал.* Өйрәк мороно.

**БЫЖЫЛДАТЫУ** *к.* Быж-быж иттереү, быж-быж килтереү. *Ун ике йәштә булһам да курай быжылдата, ҡыҙҙар бейерлек бер нисә көй уйнай белә инем.* С. Кулибай.

**БЫЖЫЛДАУ** *к.* Быж-быж итеү, быж-быж килеү.

**БЫЖЫР** *и.* **1.** Биттәге ваҡ-ваҡ ҡына уйым; шаҙра. *Тәрән быжырҙарын бүртендереп, ҡара янып ултырған Мәхмүтов та һүҙгә ҡушылды.* И. Насыри.

**2.** Һыу өҫтөндәге ваҡ тулҡын; бөҙөр.

**3.** *с. мәг.* Ваҡ-ваҡ ҡына уйымлы (биткә ҡарата). *Быжыр бит.* / Шундай бите булған, шундай битле. *Быжыр кеше.* ■ *Быжыр бер егет Ташлы урамына һыймай, баш сайҡап, үтеп-сүтеп йөрөй.* З. Биишева.

**БЫЖЫРЛАНЫУ** *к.* **1.** Ваҡ ҡына төрткө булып уйылып ҡалыу (биткә, тәнгә ҡарата); шаҙраланыу.

**2.** Ваҡ-ваҡ ҡына булып тулҡынланыу, йыйырсыҡланыу (һыуға ҡарата). *Йылғаның көҙгө кеүек шыма өҫтө быжырланып китте. «Көн боҙолоп бара, ярға сыкһаң, нисек булыр?» — тине Рәйсә.* Х. Мохтар.

**БЫЖЫРЛАУ** *к.* **1.** Ваҡ-ваҡ ҡына төрткө итеп уйғылау (битте, тәнде); шаҙралау. *Сәсәк битте быжырлай.*

**2.** Ваҡ-ваҡ ҡына итеп тулҡынландырыу, йыйырсыҡлау (һыу өҫтөн); бөҙөрләү.

**БЫЖЫРМАҠ** *и.* **1.** Быжыр-быжыр булып торған ҡытыршы; быжыртмаҡ. *Һыу өҫтөнөң быжырмағы.*

**2.** *с. мәг.* Ваҡ-ваҡ ҡына уйымлы. *Таҙ карын быжырмак була.*

**БЫЖЫРМАҠЛАНЫУ** *к.* Быжырмаҡҡа әйләнеү, быжырмаҡ булыу. *Уның [күлдең] өҫтө беленер-беленмәҫ кенә быжырмакланып тора.* Н. Мусин.

**БЫЖЫРМАҠЛАУ** *к.* Быжырмаҡ яһау, быжырмаҡлы итеү.

**БЫЖЫРТМАҠ** *и. кар.* **быжырмаҡ.**

**БЫЖЫУ** *к.* **1.** Йылыла оҙаҡ ятҡандан йомшап бөршәйеү. *Картуф быжыған. Кишер быжыған.*

**2.** *диал. кар.* **бәҫәреү** [1] 1. *Быжыған бесән.*

**БЫЗ, бызз** *окш.* Бал ҡорто, себен, серәкәй кеүек бөжәктәр осҡанда сыҡҡан тауышты белдергән һүҙ. *Серәкәй бызз итеп оса.*

**БЫЗ-БЫЗ, быз да быз** *окш.* Ҡабат-ҡабат быз иткән тауышты белдергән һүҙ. *Бал корттары быз-быз килеп оса.*

**БЫЗҠ-БЫЗҠ, бызҡ та бызҡ** *окш.* Гармунды насар тартҡанда сыҡҡан көйһөҙ тауышты белдергән һүҙ. *Гармунды бызк-бызк килтереү.*

**БЫЗҠЫЛДАТЫУ** *к.* Бызҡ-бызҡ иттереү, бызҡ-бызҡ килтереү. *Гармунды бызкылдатыу.*

**БЫЗҠЫЛДАУ** *к.* Бызҡ-бызҡ итеү, бызҡ-бызҡ килеү (гармунға ҡарата). *Бызкылдығы сығыу.*

**БЫЗЛАТЫУ** [1] *к. йөкм. кар.* **бызлау** [1].

**БЫЗЛАТЫУ** [2] *к. диал.* Мызлатыу.

**БЫЗЛАУ** [1] *к.* Быз итеү. *Бал корттары бызлап оса, сәскәләрҙең һутын йыя.* М. Сөндөклө.

**БЫЗЛАУ** [2] *к. диал. кар.* **мызлау** 2.

**БЫЗМЫҠАЙ** *и. диал.* Әүмәлә.

**БЫЗМЫР** *с.* Тиҙ ҡуҙғала алмаған, яй эшләүсән; мыштыр. *Бызмыр кеше.*

**БЫЗМЫРЛАУ** *к.* Яй ҡуҙғалыу; мыштырлау. *Бызмырлығы сығыу.* ■ *[Егет:] Йә, йә, инеүеңде бел, ағай. Поезд ишәк түгел, бызмырлап торғанды көтмәй ул.* З. Биишева.

**БЫЗМЫРЛЫҠ** *и.* Бызмыр ҡыланыш.

**БЫЗЫЙЫТ** *и. диал. кар.* **аҡыя** 1.

**БЫЗЫЛДАҠ** *с.* Быз-быз тауыш сығарған (бөжәккә ҡарата).

**БЫЗЫЛДАТЫУ** *к. йөкм. кар.* **бызылдау.** *Күгәүенде бызылдатыу.*

**БЫЗЫЛДАУ** *к.* Быз-быз итеү, быз-быз килеү. *Иңкеш бызылдай. Бызылдығы сығыу.* ■ *Ләпәктәр менән күгәүендәр өҙлөкһөҙ бызылдап, күк айғыр янында өйрөлә.* З. Биишева.

**БЫЗЫЛДАШЫУ** *к. урт. кар.* **бызылдау.**

**БЫЗЫР-БЫЗЫР** *окш.* Шыйыҡлыҡ төбөнән ваҡ ҡына булып һауа ҡалҡҡанды белдергән һүҙ. *Баҫканда һыу төбөнән бызыр-бызыр итеп һауа калка.*

**БЫЗЫРЛАУ** *к.* **1.** Бызыр-бызыр итеү, бызыр-бызыр килеү. *Бызырлығы сығыу.*

**2.** Бөрсөк-бөрсөк ҡыҙарып ҡалҡыу. *Эҫегә тән бызырлап сәберткән.*

**БЫЗЫРМАҠ** *и.* Ваҡ-ваҡ ҡына быжырмаҡ.

**БЫЗЫРЫҠ** *и. диал.* Кер туҡмағы.

**БЫЙМА** *и.* Йөндән баҫылған ҡуныслы ҡышҡы аяҡ кейеме. *Калушлы быйма. Быйма баҫыу. Быйма төпләү.* ■ *Аҡ карҙа аҡ быйма менән их, күңелле атлауы.* С. Муллабаев. **Калуш быйма** ҡыҫҡа ғына ҡуныслы итеп баҫылған быйма.

**БЫЙМАСЫ** *и.* Быйма баҫыусы.

**БЫЙПАНЛАУ** *к. диал.* Быйтанлау.

**БЫЙТАНЛАҠ** *с.* Уйнаҡлап, ҡылансыҡланып торған (ҡатын-ҡыҙға ҡарата); ҡыйпысыҡ.

**БЫЙТАНЛАУ** *к.* Башты-күҙҙе уйнатып, ҡылансыҡланыу; йыртанлау.

**БЫЙТЫҠАС** *с. һөйл.* Быйтанлаҡ.

**БЫЙТЫС** *с.* Ҡылансыҡ (бәләкәй ҡыҙҙарға ҡарата). *Быйтыс ҡыҙыҡай.*

**БЫЙЫЛ** *р.* Ошо йылы. *[Аҡназар] былтыр күршеләре менән берлекләшеп арыш сәсеп, быйыл шуны иҫән-аман тапатып алды.* Ғ. Дәүләтшин.

**БЫЙЫЛҒЫ** *с.* Ошо йылғы. *Быйылғы уҡыу йылында бер генә бала ла ситтә тороп ҡалмаһын.*

**БЫҠ-БЫҠ** *оҡш.* Ҡуйы нәмә яй ғына ҡайнағанда сыҡҡан йәки аңлайышһыҙ итеп, өҙөп-өҙөп эстән һөйләнгән тауышты белдергән һүҙ. *Бутҡа быҡ-быҡ итеп бешә. Быҡ-быҡ килә, нимә әйткәне аңлашылмай.*

**БЫҠРА** *с. диал.* Шамтыр.

**БЫҠТЫРЫЛЫУ** *ҡ. төш. ҡар.* **быҡтырыу.** *Быҡтырылған ит.*

**БЫҠТЫРЫУ** *ҡ.* **1.** Тандыр ғына утта томалап бешереү. *Кәструл ҡапҡасын ябып, балыҡты быҡтырырға ҡуйыу.*

**2.** Боҫҡа, эҫегә йомшатыу, ебетеү. *Малға һаламды быҡтырып ашатыу.* ■ *Аҙыҡ кухнялары тоҡҡарлыҡһыҙ эшләй, малдарға һалам быҡтырып, тәмләндереп бирелә.* «Совет Башҡортостаны», 1986, 23 ғинуар.

**БЫҠЫЛДАҠ** *и.* Быҡ-быҡ итеп һөйләгән кеше.

**БЫҠЫЛДАУ** *ҡ.* Быҡ-быҡ итеү, быҡ-быҡ килеү. *Бутҡа ҡуйырып быҡылдай башланы.* ■ *Стражник нимәләр быҡылдай башлағайны ла, Хисамый тағы йоҙроҡ күрһәтеп, уның телен тыйҙы.* Б. Бикбай.

**БЫҠЫР-БЫҠЫР** *оҡш.* Ҡуйы нәмә ныҡ ҡайнағанда сыҡҡан йәки һыу эсенән һауа урғылып сыҡҡандағы, һыуға төшөп болғанғандағы тауышты белдергән һүҙ. *Быҡыр-быҡыр ҡайнау. Көндөҙ өйрәк ҡулдә йөрөй быҡыр-быҡыр* С. Ҡудаш.

**БЫҠЫРЛАУ** *ҡ.* Быҡыр-быҡыр итеү, быҡыр-быҡыр килеү. *Быҡырлығы сығыу.*

**БЫЛ (бының, быға, быны, бынан, бында;** *күпл.* **былар)** *күрһ. а.* Нәмәне йәки эш-хәлде айырып күрһәтеү, билдәләү хеҙмәтен үтәй. *Сәғиҙә был ауылда ғүмер буйы йәшәрмен тип башына ла килтермәй ине.* М. Тажи. *Ул [йөрәк] яна был донъяны күрмәк булып аҡлыҡ менән.* Ш. Бабич.

**2.** Билдәле бер нәмәгә, булып үткән эш-хәлгә кире ҡайтарып тоҫҡау өсөн ҡулланыла. *[Тамыр батыр] юлға сығырға булған. Был хаҡта ата-әсәһенә лә әйткән* (Әкиәттән). / Билдәле бер затҡа тоҫҡап, зат алмашы хеҙмәтен үтәй. *Көтөүсе .. Ерәнде етәкләп, сығып китә. Әй бара, ти, был, әй бара, ти. Бара торғас, бер йылға буйына етә, ти* (Әкиәттән). *Элекке заманда бер бабай менән бер әбей йәшәгән, ти. Быларҙың берҙән-бер ҡыҙҙары булған, ти* (Әкиәттән).

♦ **Быға ҡәҙәр** (*йәки* **саҡлы, тиклем**) ошо ваҡытҡа ҡәҙәр. *Был һүҙҙе ишеткәс, Ҡуҙыйкүрпәс эҫеле-һыуыҡлы булып китте, ти. Ни өсөн тиһәң, ул быға тиклем Маянһылыу уның кәләше икәнен белмәй йөрөй ине, ти.* «Ҡуҙыйкүрпәс менән Маянһылыу». **Был арала** 1) ошо ваҡыт эсендә. *Әбей менән бабайҙы дейеү осора тибеп ебәргән, ти. Был арала егет байтаҡ ер киткән, ти* (Әкиәттән); 2) һуңғы ваҡытта. *[Гәрәй:] Был арала һин байғошҡа ла тынғы юҡ, Саҡай туған.* Б. Бикбай. **Был ни был, был ни хәл был, был ни эш был** берәй нәмәгә аптырағанда әйтелә. — *Был ни хәл был, ҡайҙа киттеләр һуң әле беҙҙекеләр?* — *тине Айбулат.* Һ. Дәүләтшина. **Был ни тигән һүҙ** берәй кешенең һүҙенә аптырағанда, ғәжәп ҡалғанда әйтелә. *[Үмәр:] Был ни тигән һүҙ тағы! Быға тиклем кем кейәү күҙләп ҡыҙ биргән?* Һ. Дәүләтшина. **Бынан ары** (*йәки* **былай, кире, түбән, һуң**) бының аръяғында (*йәки* был яғына), алдағы кондә, киләсәктә. *Бының был яғына кешене эшкә ҡарап алырға кәрәк.* **Эшме ни был** берәй нәмәгә ризаһыҙлыҡ белдергәндә әйтелә.

**БЫЛАҒАЙ** [*рус.* благой] *с.* Урынһыҙға һөйләнеп, бәйләнеп, еңел ҡыланған.

**БЫЛАҒАЙЛАНЫУ** *ҡ.* Былағайса ҡыланыу.

**БЫЛАЙ** *р.* **1.** Был рәүешле. *Ире унан: «Ниңә былай илайһың, ни булды?» — тип һораған* (Әкиәттән).

**2.** Был яҡҡа. *Ҡала урамынан бер тегеләй, бер былай үткән халыҡты ҡарап, тупһала ултырабыҙ.* Т. Йәнәби.

**3.** Берәй нәмәнең, эш-хәлдең төрлө яғын самалап, уртасараҡ бер фекер, мөнәсәбәт белдергәндә әйтелә. *Йөҙөк былай үҙе саф алтын түгел.* С. Агиш.

**4.** *с. мәғ.* Ғәҙәттәге, ҡәҙимге. *Элек осар тейен былай тейенгә ҡарағанда ҡуберәк ине.* Я. Хамматов.

**5.** *бәйл. функцияһында* Сығанаҡ килеш формаһындағы һүҙҙән һуң килгәндә, „артыҡ, ныҡ, яҡшы“ тигән мәғәнәне белдерә. *Ата менән әсә шатлыҡтан ни эшләргә лә белмәгән. Малай уларҙан да былайыраҡ ҡыуанған* (Әкиәттән). *Хөббөниса ауылда хәлле генә йәшәгән ҡатын... Эш тиһәң инде — емертеп һала, арлы-бирле ирҙәрендән былайыраҡ.* Р. Солтангәрәев.

♦ **Былай булғас** (*йәки* **булһа**) телгә алынған эш-хәлдән, шарттан сығып, бер төрлө йомғаҡ яһағанда әйтелә. *[Өмәт:] Һеҙ һаман да ҡурҡаһығыҙ! Былай булһа, ғүмергә кеше була алмаҫһығыҙ!* Д. Юлтый. **Былай ғына** 1) бер нәмәһеҙ, шул көйө генә. *[Гөлнур:] Ҡара папкаһыҙ ғына, былай ғына әйтергә булалыр бит, Сафа Сөләймәнович?* М. Тажи; 2) ниндәйҙер бер ниәт, эш менән түгел; тик, буш. *[Хафиз:] Һабантуйға килдегеҙме, ҡыҙҙар? [Зифа:] Былай ғына килдек әле күл буйына.* Ҡ. Даян. **Былай ҙа** бынан башҡа ла, унһыҙ ҙа. *Ул [әсә] былай ҙа Мөхитте күрә алмай. Мөхиттән ҡотола алмай йөрөй.* К. Кинйәбулатова. **Былайға китһә** (*йәки* **ҡалһа**) уңайһыҙ бер эш-хәлдән сығып, йомғаҡ яһап ҡуйғанда әйтелә. *[Әпләс:] Арыу тәрбиәләп ҡуяйыҡмы әллә тип йөрөгән йөрөш инде. Былайға ҡалһа, әҙәм балаһын ҡайҙа ҡумһаң дә ятып ҡала ғуй.* Һ. Дәүләтшина.

**БЫЛАЙ-АЛАЙ** *с.* Юҡлыҡ йәки һорау формаһындағы хәбәр булып, ниҙеңдер юғары дәрәжәләге бер сифатын белдерә. *Ауыҙы былай-алай түгел. Тауышы былай-алаймы. // Былай-алай ғына ҡыҫҡырмай.*

**БЫЛАЙТЫУ** *ҡ. ҡыҫҡ. ф. һөйл.* Былай итеү. *Юлдыбаевтың былайтып һис бер асыуһыҙ-ниһеҙ иптәштәрсә һөйләп биреүе .. йыйылған кешеләрҙе ирәбеләндереп ебәрҙе.* Ғ. Дәүләтшин.

**БЫЛАМЫҠ** *и. диал.* Боламыҡ.

**БЫЛАУ** [*фарс.*] *и.* Дөгө менән иттән быҡтырып бешергән ашамлыҡ. *Үзбәк кәрҙәштәребеҙҙе иҫтәремә төшөрөп, былау килтерттем.* Т. Арслан.

**БЫЛБЫЛ** [*фарс.*] *и. шигр.* Турғай төркөмөнә ҡараған һорғолт төҫтәге бик матур һайрай торған бәләкәй генә күсәр ҡош; һандуғас. *Быйыл ҡоштар һыҡлап ҡайтты беҙгә, һыҡлап сәскә атты муйылдар. Ярҙарына Иҙел кермәй шашты, һыҡлап йыр башланы былбылдар.* Х. Кәрим.

**БЫЛДЫР** *с.* Һүҙҙе ҡабаланып, аңлайышһыҙ итеп һөйләүсән. *Былдыр кеше.*

**БЫЛДЫР-БЫЛДЫР** *оҡш.* Ситтән айышһыҙ, өҙөкһөҙ булып ишетелгән һөйләшеүҙе белдергән һүҙ; лыбыр-лыбыр. *Былдыр-былдыр итеү. Былдыр-былдыр килеү.* ■ *Тиҫтерҙәр менән былдыр-былдыр хәбәр һөйләшкән, серләшкән булып, күк үлән күренеү менән ҡаршы тау түмәләстәргә әтмәкәй, йыуа йыйырға сыға инек.* Х. Назаров.

**БЫЛДЫРЛАҠ** *и.* Былдыр-былдыр итеп һөйләгән кеше.

**БЫЛДЫРЛАУ** *ҡ.* Былдыр-былдыр килеү. *Былдырлап һөйләшеү. Былдырлығы сығыу.*

**БЫЛДЫРЛАШЫУ** *ҡ. урт. ҡар.* **былдырлау.**

**БЫЛЙЫРАУ** *ҡ.* Ныҡ йомшау, иҙрау. *Картуф оҙаҡ ҡайнап былйырап киткән.*

**БЫЛҠ-БЫЛҠ** *оҡш.* Нәҙек муйынлы һауыттан шыйыҡлыҡ аҡҡанда сыҡҡан тауышты белдергән һүҙ. *Былҡ-былҡ итеү.* ■ *Ғәлләмдең шешәнән сынаяҡҡа ҡойған араҡыһы былҡ-былҡ аға башланы.* А. Таһиров.

**БЫЛҠЫ** *с.* **1.** Һимеҙ, йомшаҡ тәнле. *Былҡы кеше.*

**2.** *күсм.* Эшкә йомшаҡ, йүнһеҙ.

**БЫЛҠЫЛАНЫУ** *ҡ.* **1.** Һимеҙ, йомшаҡ тәнлегә әйләнеү; былҡы булыу.

**2.** *күсм.* Эшкә йомшаҡ, булдыҡһыҙға әйләнеү; булдыҡһыҙ булыу.

**БЫЛҠЫЛДАУ** *ҡ.* Һимеҙлектән йомшаҡ булып һелкенеү (тәнгә ҡарата). *Бай былҡылдап торған йыуан елкәһен күскә бороп, иркенләп ултырҙы.* Я. Хамматов.

**БЫЛҠЫМ** *с.* Тотҡан нәмәһен төшөрөп барыусан, ҡулайһыҙ. *Былҡым кеше.* ■ *Йөҙө ҡара Нәсимә ни ҡабаланып килеп, анау ишек алдында дөмәйеп ятҡан ташҡа һөрөндө лә табаны төшөрөп ярып ҡуйҙы, былҡым.* Ғ. Дәүләтшин.

**БЫЛСАЙЫУ** *ҡ.* Сейләнеп, йәшкәҙәп ҡыҙарып тороу (күҙгә ҡарата).

**БЫЛСЫҠ** *с.* Сейләнеп, йәше ҡойолоп, ҡыҙарып торған; бысый. *Былсыҡ күҙ.*

**БЫЛСЫЛДАУ** *ҡ. диал.* **бысылдау.**

**БЫЛТ** *оҡш.* Киҫкен хәрәкәтте, ҡапыл күренгәнде белдергән һүҙ. *Былт итеү.* ■ *Бер эт килеп сыҡты былт итеп, бесәй тороп ҡасты йылт итеп.* Р. Талипов.

**БЫЛТАЙЫУ** *ҡ.* **1.** Йомро ғына булып ҡабарыу; бүлтәйеү. *Ҡорһағы былтайып тора.*

**2.** *диал.* Ҡылтайыу.

**БЫЛТАНЛАУ** *ҡ. диал. ҡар.* **ҡыйшанлау** 2.

**БЫЛТ-БЫЛТ** *оҡш.* Ҡабат-ҡабат былт иткәнде белдергән һүҙ. *Былт-былт итеү.* ■ *Ҡайҙандыр иҫкән елгә [шәм] былт-былт итә.. Уның былт-былт итеүенән бәләкәй өйҙөң һәр ерендә шомло күләгәләр уйнай.* Ғ. Ғүмәр.

**БЫЛТЫҠ** *с. диал.* **1.** Ҡылтым.

**2.** Ҡылансыҡ.

**БЫЛТЫЛДАУ** *ҡ.* Былт-былт итеү, былт-былт килеү. *Шәм, һүнәм, һүнәм тигән кеүек, былтылдап ҡара һөрөмөн .. туҙҙырҙы.* Ғ. Ильяс.

**БЫЛТЫМ** *с. диал.* Ҡылтым.

**БЫЛТЫР** *р.* Үткән йылы.— *Мин шулай былтыр..— тип [Йәнтимер] үҙенең уҙған йылғы «шәплектәрен» һөйләй башланы.* С. Агиш. *Былтыр үлгән ябалаҡты быйыл атып алдыңмы?* (онотолоп бөткән нәмәне яңы белгән кешегә әйтелә).

♦ **Биш былтыр** *ҡар.* **биш. Былтырҙың күҙе йылтыр** кеше үткәндәге берәй нәмәне һөйләгәндә ышанып етмәгәнде белдереү өсөн әйтелә.

● *Былтыр ҡыҫҡанға быйыл ҡыҫҡырмайҙар.* Мәҡәл.

**БЫЛТЫРҒЫ** *с.* Үткән йылғы. *[Тимер:] Беҙ быйыл былтырғыға ҡарағанда ике тапҡыр артығыраҡ сәстек.* Б. Бикбай.

♦ **Биш былтырғы** *ҡар.* **биш.**

**БЫЛТЫРЛЫ-БЫЙЫЛЛЫ** *р.* Һуңғы ике йыл эсендә. *Былтырлы-быйыллы [фермаға] күпме ҡыҙ-ҡырҡын килде, ҡайныһы һигеҙ класс, ҡайныһы тулыҙҙы йә унды бөткән.* «Совет Башҡортостаны», 1965, 19 март.

**БЫЛЫҒЫУ** [былыҡ≠] *ҡ.* Дымланып, ҡыҙыу (иген, бесәнгә ҡарата). *Һыулай өйөлгән игендең дымланыуы, былығып китеүе бар.* Ғ. Дәүләтшин.

**БЫЛЫҠТЫРЫУ** *ҡ.* **1.** Дымлы көйө өйөп, ҡыҙҙырыу (иген, бесәнде).

**2.** *диал. ҡар.* **быҡтырыу** 1.

**БЫНА** *күрһ. а.* **1.** Алдағы бик яҡын кешене йәки нәмәне күрһәткәндә белдерә. *Бына яңы ҡунаҡ, Салих иптәш,— тине Наилә.* С. Агиш. *Кейеҙбай кеҫәһенән алмаһын сығарып: Бына алма — әжәл дарыуы. Ҡыҙға шуны ашатырға кәрәк»,— ти* (Әкиәттән). / Бер нәмәне кешегә биргәндә һонғанда әйтелә. *[Индрил:] Байгужа бына һиңә аҡса, һин бөгөн өс тауыҡ, сусҡа майы, картуф тап.* Д. Юлтый. / Бер һүҙгә, эш-хәлгә кешенең иғтибарын тартыу өсөн әйтелә. *Бына мин үҙемдең тормоштан бер миҫал килтерәйем әле.* М. Тажи.

**2.** Үҙенән алда килгән һүҙ белдергән мәғәнәне көсәйтеү өсөн ҡулланыла. *Ата-әсәләрҙең гүмере булып беҙгә ҡалды бына был тормош.* Ғ. Сәләм.

**3.** Йомғаҡлау һүҙҙәренән алда килеп, уларҙың мәғәнәләренә асыҡлыҡ өҫтәй. *Бына шул рәүешсә фольклор синфи көрәш, синфи тәрбиә ҡоралы булып хеҙмәт иткән.* Ғ. Амантай. *[Заятүләк:] Ерем — Балҡан тау, һыуым — Дим.. Бына шул ерҙәрҙе һағынам мин.* «Заятүләк менән Һыуһылыу». / «Хәҙер» һүҙе менән килеп, уға һөҙөмтәлек мәғәнәһе өҫтәй. *[Үмәр:] Беҙҙең ҡайғы булмаған икән, бына хәҙер баш ҡайғыһы тыуҙы.* Һ. Дәүләтшина.

**4.** Эш-хәл йәки ваҡиғаларҙың барышын күҙ алдында булған кеүек итеп һүрәтләү өсөн ҡулланыла. *Бына ҡыш үтеп, яҙ килеп еткән* (Әкиәттән).

**5.** Һөйләгән һүҙгә төрлө тойғо биреү өсөн ҡулланыла. *[Юламан:] Бына исмаһам минең Буран-*

*гам шундай һирәк осрай торғандарҙың береһе ине.* З. Биишева. *[Ғамир:] Мин үҙем дә .. аңламайым шул бына.* Б. Бикбай.

**6.** Берәй эш-хәлдең хәҙер йәки оҙаҡламай, тиҙ үк булырға тейешлеген белдереү өсөн ҡулланыла. *Әсәйем уны [атайымды], бына ҡайта, бына ҡайта, тип көттө лә көттө. Ул ҡайтманы.* М. Тажи.

♦ **Бына ғына тора** бик яҡында, эргәлә. *[Фатима:] Туҡтағыҙ, мин барып киләйем, уның [Харистың] өйө бына ғына тора.* Б. Бикбай. **Бына инде** берәй эш, хәбәргә аптырап ҡалғанда әйтелә. *Бына инде, ул ни тигән эш тағы.* **Бына нимә** берәй һүҙ әйтер алдынан иғтибарҙы тартыу өсөн әйтелә.— *Улай булһа, бына нимә,— тип елкенеп китә тағы Өйрәнсек.— һин мине үҙеңә ярҙамсы итеп алаһың.* З. Биишева. **Бына тағы** берәй нәмәгә аптырағанда әйтелә. *[Муйылбикә:] Ҡуйсы, буш менән булмағыҙ, карт кешене мәшәҡәтләп. [Мәғәфүрә:] Бына тағы! Нишләп буш булһын.* һ. Дәүләтшина. **Бына тигән** бик яҡшы, сиктән тыш яҡшы. *Кинйә улының кәләше .. ҡайныһына бына тигән ҡулдаҡ тоттора: үҙе ап-аҡ, үҙе йомшаҡ, үҙе йоҡа ғына* (Әкиәттән). **Бына һин уны** (*йәки* **әле**) берәй нәмәгә ғәжәпләнеп, шуны хуп күргәндә йәки шелтәләгәндә әйтелә. *Ҡайһылай матур эшләнгән. Бына һин уны!* **Бына һиңә** 1) *ҡар.* **бына (һиңә) кәрәк булһа**; 2) кешенең ҡапыл беленгән бер ҡылығына аптырағанда әйтелә.— *Бына һиңә ипле кеше, бына һиңә түрә!* Б. Бикбай. **Бына (һиңә) кәрәк булһа** көтөлмәгән, ғәжәп нәмә килеп сыҡҡанда әйтелә. *[Ҡәмәр ҡортҡа:] Бына кәрәк булһа кәҙерле ҡунаҡ, атаң башы бармы ни бында, нимә бар тип ҡайттың?* Т. Йәнәби.

**БЫНА-БЫНА** *р.* Хәҙер, ошо мәлдә; тиҙ үк. *Күп ҡырған ул [Абдрахман] аҡтарҙы. Тик бер мәл уның патроны бөткән. Бына-бына аҡтар ҡулына эләгәбеҙ тигән көнгә ҡалғандар.* Ә. Вахитов.

**БЫНАҒАЙ** *ымл. ҡар.* **бынағайыш.**

**БЫНАҒАЙЫШ** *ымл.* Көтөлмәгән бер нәмәгә ғәжәпләнгәндә, аптырағанда әйтелә.— *Бынағайыш,— тип аптырай Ғәйзулла бабай,— Бынау төндә ниндәй эше иреккән ҡуркмай, өркмәй шулай йырлап йөрөр икән.* Н. Мусин.

**БЫНАМЫ** *с. ҡар.* **бынамын.**

**БЫНАМЫН** *с.*, **бынамын тигән 1.** Бөтә яҡтан килгән, бик яҡшы. *Ҡарап тороуға бынамын кеше.* ■ *— Улым бар ине, алты йәшлек булғас, муллаға урак урып ятҡанда үлде, меҫкенем.. Хәҙер бынамын тигән ағайың булыр ине.* Н. Ҡәрип.

**2.** *р. мәғ.* Бик яҡшы, тейешенсә, кәрәгенсә. *Бынамын йәшәп ятыу.* ■ *Ул [Алма], ҡымыҙ эсә торғас, бынамын булып таҙарып китте.* Ҡ. Ибәтуллин.

**БЫНАН** *р.* **1.** Ошо ерҙән, ошо урындан. *Бынан малай сакта атаһы менән киткән, хәҙер, егет булғас, ҡайтҡан Аҙнағол.* З. Биишева.— *Һиңә бынан китергә кәрәк. Берәй урынға барып эшкә инергә кәрәк. Юғиһә, бында үҙеңде эт кеүек итеп үлтереп китерҙәр.* Д. Юлтый.

**2.** Ошо мәлдән. *Был Сурағолдоң бынан һигеҙ йыл элек ташлап ҡасҡан ауылы ине.* Т. Хәйбуллин. *Бынан күп йыл элек Урал аша бер поезда китеп барабыҙ.* Ғ. Сәләм.

**БЫНАУ** *күрһ. а.* Эргәләге нәмәгә тоҫҡағанда йәки ҡулға тотоп күрһәткәндә әйтелә; бына был. *[Таҙ:] Хәҙер үк бынау кейеҙгә ултыр ҙа атайым менән әсәйемде, ике ағайымды алып кил* (Әкиәттән). / Билдәле бер нәмә тураһында хәбәр иткәндә, нимәгәлер баҫым яһар өсөн ҡулланыла. *[Миңлебай:] Ҡола бейә китте. Бынау Ҡоток ағай арттырманы бит. Ахыры туҡһан биш һумға һаттым.* Т. Йәнәби.

**БЫНАУЛАЙ** *күрһ. а.* Бына ошолай, ошо рәүешле. *Ул [Мансур]: «Бынаулай яман көндө лә йөрөймө икән ни?» — тип уйлай ҙа тағы ла тырышыбыраҡ атлай.* Ш. Насыров.

**БЫНАУЛАЙТЫП** *р.* Ошо рәүешле; ошолай итеп.— *Мау баш булмаҫ ерҙән мау баш булырһың, бынаулайтып хәсрәт уты йотоп ултырғас.* һ. Дәүләтшина.

**БЫНАУЫНАН** *р.* **1.** Бынау ерҙән, ошо урындан. *Бынауынан уҡып алып китеү.*

**2.** Һуғырға янағанда әйтелә. *[Әткол бай:] Ниегеҙ тағы буленмәгән. Бынауынан икегеҙҙе ике яҡҡа һалып-тырып ебәрермен.* Т. Хәйбуллин.

**БЫНАУЫНДА** *р.* **1.** Бына был ерҙә, ошо урында; ошонда. *Бынауында тороп тороу.*

**2.** Бына был ергә, ошо урынға. *Әйберҙе бынауында ҡуйыу.*

**БЫНАУЫНДАЙ** *с.* Ошоноң кеүек, ошо рәүешле; ошондай. *Мөлөк ағай уйлай-уйлай башы ҡаңғырып китте, юлында бынауындай уңайһыҙлыҡ, күңелһеҙлек осрағас, асыуы ла килде.* Т. Хәйбуллин.

**БЫНДА** *р.* **1.** Был урында, ошо ерҙә; ошонда. *Бында тауҙар, бында киң баҫыуҙар. Ҡарап торам, шул саҡ яныған көн яғына китте цистерналар, Уралыма керҙе вагондар.* Ғ. Сәләм. *Йәйгенәйен бында йәйләгәйнем, ҡышҡынайын ҡайҙа ҡышлайым.* (Халыҡ йырынан).

**2.** Ошо урынға, ошо ергә. *Ямал башындағы яулығын иплэштереп алды ла гармунсыға әйәк ҡаҡты: — Йә, бындараҡ, яҡыныраҡ килеп баҫ инде. Ҡуркма, тешләмәм.* М. Тажи. *[Батша:] Шул ҡулы ҡаймыҡҡан кешене тотоп килтерегеҙ әле бында!* (Әкиәттән).

**БЫНДАҒЫ** *с.* Был урындағы, ошо ерҙәге; ошондағы. *Бындағы «Хөсәйниә» мәҙрәсәһенә инергә тырышып йөрөп ҡараһам да мине алманылар. Аптырағас, ундағы Заһиҙулла хәҙрәт мәҙрәсәһенә барып индем.* Т. Йәнәби. *Бындағы халыҡтың күпселеге рус,— тине Гөлнур.* М. Тажи.

**БЫНДАЙ** *билд. а.* Ошоға оҡшаған, ошоноң кеүек; ошондай. *Йәнтимергә минең әйткән һүҙҙәремдең һәр бер өнө үк ине. Бындай һүҙгә нәмә тип тә яуап бирә белмәне.* С. Агиш.

**БЫП-** *киҫ.* Бы- өндәре менән башланған ҡайһы бер сифатҡа һәм рәүешкә ҡушылып, уларҙың мәғәнәһен көсәйтә. *Бып-бысрак. Бып-бысый.*

**БЫР, бырр** *оҡш.* Ваҡ ҡош осоп күтәрелгәндә, өйрөлмәк өйрөлгәндә сыҡҡан тауышты белдергән һүҙ; пыр. *Быр итеү.* ■ *Турғай бырр итеп осоп китә* (Әкиәттән).

**БЫРАҒЫТЫУ** *к. диал.* Быраҡтырыу.

**БЫРАҠТЫРТЫУ** *к. йөкм. ҡар.* **быраҡтырыу.**

**БЫРАҠТЫРЫЛЫУ** *ҡ. төш. ҡар.* **быраҡтырыу.**

**БЫРАҠТЫРЫУ** *ҡ.* Теләһә нисек ташлау, атып ебәреү; бырғау, бырғытыу, ырғытыу. *[Камил — Рифҡәткә:] Барыбыҙҙың күҙ алдында ҡулындағы бысаҡты ҡулгә алып быраҡтыр!* Ф. Иҫәнғолов. *Дейеүҙе Урал елтерәтеп күтәреп алды, быраҡтырып та ебәрҙе, ти.* «Урал батыр».

**БЫРАМАТ** [*рус.* промотать] *и. диал. ҡар.* **мөстән**[1].

◆ **Бырамат сабыу** *йәки* **быраматта йөрөү** эш эшләмәй, ваҡытты бушҡа уҙғарып йөрөү; ел ҡыуыу, эт һуғарыу.

**БЫРАН-ЗАРАН** *р. ҡар.* **пыран-заран.**

**БЫРАСЫЛ** [*рус.* прасол] *и. иҫк.* Ат менән сауҙа иткән кеше.

**БЫРАУ** *и.* Бороп тишек тишә торған ҡорал. **Кендек бырауы** кендек урыны тишә торған йыуан бырау. **Ҡаҙаҡ бырауы** сөй урыны тишә торған нәҙек кенә бырау. / Ер ҡатламдарын тишә торған махсус ҡорал. *Ауыл яғынан баҡсаға табан артына бырауҙар таҡҡан трактор килә ине.* Ф. Әсәнов. **Боҙ бырауы** мәке уя торған бырау. **Ер бырауы** бағана һ. б. нәмә өсөн тұңәрәк соҡор ҡаҙа торған ҡорал.

**БЫРАУЛАНЫУ** *ҡ. төш. ҡар.* **быраулау.**

**БЫРАУЛАТЫУ** *ҡ. йөкм. ҡар.* **быраулау.**

**БЫРАУЛАУ** *ҡ.* Тишек тишә торған ҡорал менән бороу. *Быраулау станогы.* ■ *Ҡарт бер уйынсыҡ тәгәрмәсте быраулап тиште лә бағаналағы ҡаҙаҡҡа элеп ҡуйҙы.* М. Тажи. / Махсус ҡорал менән ер ҡатламдарын тишеү. *Быраулау вышкаһы. Быраулау мастеры.* ■ *Нефтселәр өсөн айҙар буйы тырышып быраулаған скважиналарҙан нефть сығыуҙан да шатлыҡлы эш булырмы?* А. Карнай.

**БЫРАУЛАУСЫ** *и. ҡар.* **бырауысы.**

**БЫРАУСЫ** *и.* Ер быраулау эшендә эшләгән кеше. *Ер аҫтында бик тәрәндә ятҡан нефтҡә барып еткәнсе бырауысы ауыр һәм оҙон юл үтә.* «Совет Башҡортостаны», 1965, 15 ғинуар.

**БЫР-БЫР** *оҡш.* Ҡабат-ҡабат быр иткән тауышты белдергән һүҙ. *Быр-быр итеү. Быр-быр килеү. Турғайҙар быр-быр килеп, ағасҡа осоп ҡуна.*

**БЫРҒАЛЫУ** *ҡ. төш. ҡар.* **бырғау.**

**БЫРҒАУ** *ҡ. ҡар.* **быраҡтырыу.** *Ҡотдос ҡарт күтәргән тоғон йән көсө менән ергә бырғаны.* Ғ. Шәрипов.

◆ **Кәпәсте бырғап эшләү** күңел һалып, тырышып эшләү. *Әхсән бабай күпте күргән, ҡартлыҡҡа ла бирешмәй. Колхоз тапшырған эштәрҙе кәпәсен бырғап эшләй.* С. Кулибай.

**БЫРҒЫТЫЛЫУ** *ҡ. төш. ҡар.* **бырғытыу.**

**БЫРҒЫТЫУ** *ҡ. ҡар.* **быраҡтырыу.** *Оморҙаҡ шуларҙы [аҫыл таштарҙы] йыйып, түбәнгә бырғыта башлаған, бай уларҙы кесерткән тоҡҡа тултырып торған* (Әкиәттән).

**БЫРҠ** *оҡш.* Һыу эсенән һауа, баҫҡан ерҙән һыу йәки бүтән еүеш нәмә ҡапыл урғылып сыҡҡандағы тауышты белдергән һүҙ. *Бырҡ итеү. Бырҡ итеп ҡалыу.*

**БЫРҠ-БЫРҠ** *оҡш.* Ҡабат-ҡабат бырҡ иткән тауышты белдергән һүҙ. *Инде һәйбәт кенә йөҙөп барғанда, Юламаныбыҙ бырҡ-бырҡ итеп .. һыуға сумып сыҡты.* Ф. Иҫәнғолов.

**БЫРҠЫЛДАТЫУ** *ҡ.* Бырҡ-бырҡ иттереү, бырҡ-бырҡ килтереү. *Һаҙамыҡ ергә бырҡылдата баҫыу.*

**БЫРҠЫЛДАУ** *ҡ.* Бырҡ-бырҡ итеү, бырҡ-бырҡ килеү. *Бырҡылдығы сығыу.* ■ *Һыйырҙар .. баҫҡан һайын бырҡылдап һыу атлығып сыға.* «Совет Башҡортостаны», 1974, 19 апрель.

**БЫРҠЫРАТЫУ** *ҡ.* Еүеше һығылып сыҡҡанса иҙеү. *Ҡамыр батыр .. суҡмары менән уны [дейеүҙе] бырҡырата һуҡҡан* (Әкиәттән).

**БЫРҠЫРАУ** *ҡ.* Һыуланып, йомшап иҙелеү. *Туңған картуф ирееп, бырҡырап ята.*

**БЫРҪ** *оҡш.* Өрккән бесәй тауышын белдергән һүҙ. *Ғәбиҙә еңгәй, бесәй кеүек бырҫ итеп һикереп, Ғәләү ағай алдына килеп баҫты.* С. Кулибай.

**БЫРҪ-БЫРҪ** *оҡш.* Ҡабат-ҡабат бырҫ иткән тауышты белдергән һүҙ. *Бырҫ-бырҫ килеү.*

**БЫРҪЫЛДАТЫУ** *ҡ. йөкм. ҡар.* **бырҫылдау.**

**БЫРҪЫЛДАУ** *ҡ.* Бырҫ-бырҫ килеү. *Бесәй ят кеше тоторға иткәндә бырҫылдай.*

**БЫРТ** *оҡш.* Энә, сөй кеүек осло нәмә ҡаты булмаған нәмәгә ҡапыл ҡаҙалғанда сыҡҡан тауышты белдергән һүҙ; мырт. *Бырт итеү. Бырт итеп ҡалыу.*

**БЫРХ** *оҡш.* Тыйыла алмай ҡапыл көлөп ебәргәндәге кеүек тауышты белдергән һүҙ. *Бырх итеп көлөү.*

**БЫРХ-БЫРХ** *оҡш.* Ҡабат-ҡабат бырх иткән тауышты белдергән һүҙ.

**БЫРХЫЛДАУ** *ҡ.* Бырх-бырх итеү, бырх-бырх килеү. *Бырхылдығы сығыу.* ■ *Сәғиҙә уның [Тайморзиндың] өҫ-башына ҡарап тора торғас, сыҙамай бырхылдап көлөп ебәрҙе.* М. Тажи.

**БЫРХЫЛДАШЫУ** *ҡ. урт. ҡар.* **бырхылдау.**

**БЫРЫЛДАУ** *ҡ.* Быр-быр итеү, быр-быр килеү. *Бырылдығы сығыу.* ■ *[Ҡыуыусыларҙың] бер пуляһы йомран алдындараҡ ташҡа тейеп рикошет яһаны. Бызылдап, һыҙғырып килеү тауышын юғалтып, бырылданы.* А. Таһиров.

**БЫРЫЛДАШЫУ** *ҡ. урт. ҡар.* **бырылдау.**

**БЫСАҠ** *и.* **1.** Ҡырҡыу, турау, телеү өсөн ҡулланылған ҡыҫҡа һаплы, йоҡа йөҙлө үткер ҡорал. *Бысаҡ бите. Бысаҡ йөҙө. Бысаҡ осо. Бысаҡ һабы. Бысаҡ һырты. Иҙән бысағы. Икмәк бысағы. Итек бысағы. Салғы бысаҡ.* ■ *Урман батыр йәһәт кенә бысаҡ үткерләп алған да һимеҙ бер бейә тотоп һуйған* (Әкиәттән).

**2.** Эш ҡоралдарының ҡырҡыу, турау өсөн тәғәйенләнгән өлөшө. *Ит турағыстың бысағы. Ҡағыҙ ҡырҡҡыстың бысағы.*

◆ **Бысағымамы ни** һис кәрәкмәй тигән мәғәнәлә әйтелә. *Уның ярҙамы бысағымамы ни!* **Бысағын ашаған** үтә һаран, һарандың һараны. *[Әфтәх:] Мин үҙем йәш саҡта Мөьмин тигән байҙа малайлыҡта торған кеше.. Ул, бысағын ашаған, эшлектән сыҡҡан һаран нәмә ине.* С. Агиш. **Бысаҡҡа-бысаҡ килеү** ҡаты ҡаршылыҡҡа килеү, ныҡ талышыу. *[Нурдәүләт:] Беҙ уның менән ғүмер баҡый бысаҡҡа бысаҡ килеп йәшәнек инде. Бер генә тапҡыр ҙа уртаҡ тел таба алманыҡ.* **Бысаҡ ҡаҙалғыр** *ҡар.* **ҡаҙалыу.** **Бысаҡ телле** үткер телле, әсе телле. *Юҡты-барҙы күп*

*ҡурғән, бысаҡ телле кешенең алыҫырак булғаны хәйерле.* Б. Бикбай. **Быуынһыҙ ергә бысаҡ һалыу** булмаҫтай нәмәне талап итеү. *[Умәр:] Тел бөгөлгән ерҙән һынмаһа, быуынһыҙ ергә бысаҡ һалып та бер эш сыҡмаҫ.* Һ. Дәүләтшина. **[Йөрәккә] бысаҡ булып ҡаҙалыу** күңелгә ауыр тойғо һалыу. *Рәсихтың һүҙе йөрәгемә бысаҡ булып ҡаҙалды. Киҙәндем дә колак төбөнә тондорҙом.* Ғ. Ғүмәр.

● *Асыу бысаҡ, аҡыл — дуҫ.* Әйтем. *Үткер һүҙ йәнгә хас, үткер бысаҡ ҡанға хас.* Мәҡәл. *Үтмәҫ бысаҡ ҡул киҫер.* Әйтем.

**БЫСАҠЛАУ** *ҡ.* Малды салыу; бысаҡ һалыу. *[Истым:] Атымдың аяғы һынып ятып ҡалды, әрәм булмаһын, бысаҡлап, тунап алығыҙ* (Хикәйәттән).

**БЫСАҠЛАШЫУ** *ҡ.* Бысаҡ тотоп һуғышыу.

**БЫСАЛА** *и. диал. ҡар.* **бысылғы**[1].

**БЫСАЛАНЫУ** *ҡ. диал.* Бысылғылау.

**БЫСҠ** *окш.* Һыулы йомшаҡ нәмәгә ҡапыл баҫҡанда сыҡҡан тауышты белдергән һүҙ. *Быск итеү.*

**БЫСҠ-БЫСҠ** *окш.* Ҡабат-ҡабат бысҡ иткән тауышты белдергән һүҙ. *Быск-быск итеү. Быск--быск килеү.*

**БЫСҠЫ** *и.* Ағас, тимер таш ҡырҡа торған тешле-тешле үткер ҡорал. *Арҡыры бысҡы. Буй бысҡы. Бысҡы теше. Йәйә бысҡы. Ҡул бысҡыһы. Тимер бысҡы. Электрлы бысҡы.*

♦ **Бысҡы табы** бысҡы менән бысҡан ерҙән ваҡланып төшкән онтаҡ ағас.

**БЫСҠЫЛ** *с.* Һыуланып, лысҡылдап ятҡан (ергә ҡарата). *Ер бысҡыл, һаҙмат булып ята.*

**БЫСРАҠ** I *и.* **1.** Һыуға ебегән тупраҡ; батҡаҡ. *Юл да һурыға төштө. Арба тәгәрмәстәренә уҡмашкан бысраҡтарҙы карт ҡырғылап төшөрҙө.* М. Тажи. *Бер көн ҡоро, бер көн ямғыр булып, ерҙең бысраҡҡа мансылып, ҡара тупрағы әйләнеп ятҡан замандары.* Ғ. Дәүләтшин.

**2.** Яғылып, һеңеп, ҡатышып берәй заттың таҙалығын, сафлығын бөтөргән нәмә. *Бысраҡҡа ҡатыу.* ■ *[Рәхимә:] Кеше килгәндә бер ерҙә бысраҡ булмаһын.* Һ. Дәүләтшина.

**3.** *күсм.* Насарлыҡ, алдыҡ, ялғанға ҡоролған эш, ҡылыҡ.— *Был донъяла эшләнгән ялғандарыңды, бысраҡтарыңды дин, шәриғәт алдында йыумаҡ булаһыңмы?* М. Тажи. **Бысраҡ ташлау** (йәки **яғыу**) яла, ғәйеп яғыу.

II *с.* **1.** Ебеп иҙелеп ятҡан. *Бысраҡ юл.* ■ *Урамдарҙа йөрөү имәнес була башланы, бысраҡ урамда бер кем дә йөрөмәй.* Т. Хәйбуллин.

**2.** Таҙа түгел бер нәмәгә буялған йәки ҡатышҡан; әшәке. *Бысраҡ иҙән. Бысраҡ кейем. Бысраҡ һыу. // Бысраҡ йыуылған кейем. Бысраҡ яҙылған дәфтәр.*

**3.** *күсм.* Алдыҡ, ялғанға, намыҫһыҙлыҡҡа ҡоролған. *Бысраҡ эш. Ҡулы бысраҡ.* ■ *Мәргүп тә инде был саклы ялған, бысраҡ бер ғауғаға сыҙап торһонмо?!* Т. Йәнәби. **Бысраҡ һүҙ** әҙәпһеҙ, насар һүҙ. / Алдыҡ, намыҫһыҙлыҡ, ялған менән һуғарылған. *Бысраҡ кеше.*

**БЫСРАҠЛАНЫУ** *ҡ. ҡайт. ҡар.* **бысраҡлау.**

**БЫСРАҠЛАУ** *ҡ.* **1.** *ҡар.* **бысратыу** 2.

**2.** *күсм.* Яла, ғәйеп яғыу, ҡара яғыу; әшәкеләү. *Сәбәпһеҙгә кешене бысраҡларға тороу.*

**БЫСРАНЫУ** *ҡ.* **1.** Бысраҡҡа буялыу (кешегә ҡарата). *[Әсәһе:] Бик һәйбәт йыуғанһың, ҡыҙым, тик бысрандың бит үҙең.* К. Кинйәбулатова.

**2.** *күсм.* Насар, намыҫһыҙ эшкә ҡатнашыу.

**БЫСРАТЫЛЫУ** *ҡ. төш. ҡар.* **бысратыу.**

**БЫСРАТЫУ** *ҡ.* **1.** Еүешләп, аяҡ аҫтын батҡаҡлатыу. *[Аҡназар:] Көн боҙола баҙарға барып ҡалырға кәрәк. Көҙ көнөн белмәҫһең, йә бысратып ебәрер.* Ғ Дәүләтшин.

**2.** Бысраҡ тейҙереү, бысраҡҡа әйләндереү; бысраҡлау. *Бысратмайым биттәрен, йыртмайым һүрәттәрен, дуҫтарым уҡыр тағы, таҙа булһын китабым.* Ә. Вахитова.

**3.** *күсм.* Мәсхәрә йәки хур итеү; ҡара яғыу. *[Нурҡай:] Ҡыу һин мине, Мифтах! Исемемде ҡушып, былар алдында бысратма үҙеңде.* К. Мәргән.

♦ **Ҡул бысратыу** *ҡар. ҡул.*

● *Аяғы яман түрҙе бысрата, теле яман илде бысрата.* Мәҡәл. *Бер һыйырҙың койроғо мең һыйырҙы бысратыр.* Мәҡәл.

**БЫСРАУ** *ҡ.* Бысраҡ тейеү, бысраҡҡа әйләнеү. *Бит бысрау. Ҡул бысрау. Бысраған ҡул.*

**БЫСТАНЛАУ** *ҡ.* Бәләкәй нәмә менән оҙаҡ мәшәҡәтләнеү.

**БЫСТЫР-БЫСТЫР** *окш. диал.* Лыстыр--лыстыр. *Аяҡ аҫты быстыр-быстыр килә.*

**БЫСТЫРЛАУ** *ҡ. диал.* **1.** Лыстырлау.

**2.** *күсм.* Оҙаҡ, яй ҡыланыу; мыштырлау.

**БЫСТЫРЫУ** *ҡ. йөкм. ҡар.* **бысыу.**

**БЫСЫЙ** *с.* **1.** Йәбешкәкләнеп, лысҡылдап торған (икмәккә ҡарата).

**2.** Һыуланып, сейләнеп торған (күҙгә ҡарата); былсыҡ. *Бысый күҙ.*

**БЫСЫЙЛАНЫУ** *ҡ.* **1.** Йәбешкәк, ауыр булыу (икмәккә ҡарата); бысый булыу.

**2.** Ҡыҙарып, сейләнеү (күҙгә ҡарата); бысыйға әйләнеү. *Бысыйланып торған күҙ.*

**БЫСЫЙЛАУ** *ҡ.* Һыуланып, сейләнеп тороу (күҙгә ҡарата).

**БЫСЫҠ** *с. диал.* Бысый.

**БЫСЫЛҒЫ**[1] *и.* Еүешкә, һыуға кешелә бармаҡ, малда тояҡ араһы сейләнеп, иҙелеп тороуҙан ғибәрәт сир. *Бысылғы булыу.* ■ *Оҙаҡ ысыҡ кисеп йөрөй торғас, һарыҡтар бысылғы менән ауырый башланы.* «Совет Башҡортостаны», 1980, 17 сентябрь.

**БЫСЫЛҒЫ**[2] *и. ҡар.* **меңьяпраҡ.** *Июль баштарында бысылғы сәскә ата.*

**БЫСЫЛҒЫЛАУ** *ҡ.* Бысылғы булып иҙелеү. *Аяғы ярылып, бысылғылап бөткән.* М. Тажи.

**БЫСЫЛДАҠ** *с.* Сейләнеп торған (күҙгә ҡарата); бысый. *Бысылдаҡ күҙ.*

**БЫСЫЛДАУ** *ҡ.* Йәбешкәкләнеп, лысҡылдау (икмәккә ҡарата). *Икмәк сей, бысылдап тора.*

**2.** Һыуланып, сейләнеү (күҙгә ҡарата). *Күҙе бысылдап тора.*

**БЫСЫЛЫЙ** *с.* Тотҡан нәмәһен төшөрөп барыусан; ипһеҙ ҡуллы; былҡым.

**БЫСЫЛЫУ** *ҡ. төш. ҡар.* **бысыу.**

**БЫСЫМ** *с. диал. ҡар.* **бысый** 1.

**БЫСЫУ** *ҡ.* Бысҡы менән ҡырҡыу. *Утын бысыу. Бысып төшөрөү.* ■ *Сәлмән һырғыйырак ағастарҙы һайлап, берәм-берәм йығырға кере-*

*шеп киткән, ти. Йығып ебәрә лә, ботап, бысып, ярып, өйә бара, ти* (Әкиәттән).

**БЫСЫШЫУ** *к. урт. ярҙамл. кар.* **бысыу.**

**БЫҪ, быҫҫ** *окш.* Сей утын янғанда сыҡҡан тауышты белдергән һүҙ.

**БЫҪҠАҠ** [1] *с.* Яй ғына яуып торған ваҡ күҙле (ямғырға ҡарата). *Яуһа яумай, бер башлаһа, тымыуҙы белмәй торған быҫҡаҡ ямғырҙар теңкәгә тейә.* Ҡ. Ибәтуллин.

**БЫҪҠАҠ** [2] *и. диал.* Һаңғырау бәшмәк (*кар.* **бәшмәк**).

**БЫҪҠАҠЛАУ** *к.* Ваҡ ҡына күҙле булып, яй ғына һибәләү (ямғырға ҡарата). *Күҙгә күндәге һымаҡ, быҫҡаҡлап ҡына һалҡын ямғыр һибәләй башланы.* Я. Хамматов.

**БЫҪҠЫЙ** *и. диал.* Һуҡыр шәм.

**БЫҪҠЫТЫУ** *к.* **1.** Һыҙҙырып ҡына төтөн сығарыу; төтәтеү. *Тәмәке быҫҡытыу.* ■ *Малды себен-серәкәй йонсотҡан йәйге эҫелә .. [Исхаҡ] бер нисә урында төтөнлөк быҫҡытып ебәрә ине.* Ш. Янбаев. *Ай башы. Завод мөрйәһе быҫҡытып төтөн сығара.* Т. Арслан.

**2.** *күсм.* Аҫтан ғына һүҙ йөрөтөү. *[Юлдыбикә:] Әйтәм бер көндө күршебеҙ Әлхәмбикә һөйләнеп ултырҙы. «Ауыҙың арандай булып, әллә ҡайҙан бушты быҫҡытаһың да ултыраһың»,— тип әрләп ташланым.* Т. Хәйбуллин.

**БЫҪҠЫУ** *к.* **1.** Ялҡынһыҙ ғына төтәү. *Быҫҡып яныу.* ■ *Быҫҡып янған утын баштарынан күбек ҡатыш һыу сыға.* К. Бакиров.

**2.** *күсм.* Бик һүлпән, дәртһеҙ булыу (эш-тормошҡа ҡарата). *Мин һүнеүҙе белмәй гел яныр-мын, быҫҡый торған заттан түгелмен.* Ғ. Әмири.

**3.** *күсм.* Бер ергә сығып йөрөмәй, эшһеҙ-хәрәкәтһеҙ томаланып көн итеү. *Ҡыш буйы ыҙмала быҫҡып ятҡандан һуң яҙ башы киң яланға сығып, бер иркенләп тын алыуы үҙе ни тора!* Һ. Дәүләтшина.

**4.** *күсм.* Асыҡтан-асыҡ һөйләнмәй, ҡолаҡтан-ҡолаҡҡа быш-быш йөрөү (һүҙгә ҡарата). *[Айсыуаҡ:] Бер быҫҡыған һүҙ бар, дөрөҫ булһа? Һаҡлан, бейем, һин шул хәбәрҙән!* Х. Ғәбитов.

**5.** *диал.* Быҫҡаҡлау.

**БЫҪЛЫҒЫУ** (быҫлыҡ-) *к. диал. кар.* **бышлығыу** 1.

**БЫҪМЫРЫЛЫУ** *к.* Ҡуҙғалыр-ҡуҙғалмаҫ булып, һүлпәнләнеп көн итеү. *Йәй көнө өйҙә быҫмырылып ултырып булмай.*

**БЫТБЫЛДАУ** *к.* Быт-быт итеп ҡысҡырыу, быт-быт килеү (бүҙәнәгә ҡарата). *Һеркә осорған кукшел арыш араһында бытбылдыҡтар бытбылдай.* Р. Ғабдрахманов.

**БЫТБЫЛДЫҠ** [1] *окш.* Бүҙәнә тауышын белдергән һүҙ. *Бытбылдығы сығыу.* ■ *Йылға буйындағы бүҙәнә генә ара-тирә бытбылдыҡ-бытбылдыҡ тип ҡуя.* Т. Баишев.

● *Бүҙәнәнең өйө юҡ, ҡайҙа барһа — бытбылдыҡ.* Мәҡәл.

**БЫТБЫЛДЫҠ** [2] *и.* Һорғолт сыбар төҫлө, оҙон ҡанатлы, ҡыҫҡа ғына ҡойроҡло, күгәрсен ҙурлығындағы ялан ҡошо (итен ашайҙар); бүҙәнә.

**БЫТ-БЫТ** *окш.* **1.** Бүҙәнә тауышын белдергән һүҙ. *Быт-быт бытбылдыҡ үлән төбөндә тик ята.* Т. Йәнәби.

**2.** Мотор тоҡана яҙып туҡтағанда сыҡҡан тауышты белдергән һүҙ.

**3.** *күсм.* Өҙөк-өҙөк, етеҙ һөйләшкән тауышты белдергән һүҙ. *Быт-быт итеү. Быт-быт килеү. Быт-быт итеп һөйләү.*

**БЫТҠАШЫУ** *к.* Күмәк булып ҡыҫылышыу; тығылышыу. *[Хәҙисә апайҙың] өйөндә күҙә мөгөҙөнә элер нәмәһе юҡ. Бер бүлмәлә бытҡашып йәшәйҙер.* З. Биишева.

**БЫТҠЫМ** *с. диал. кар.* **ҡуйы** 1.

**БЫТЛЫҒЫУ** (бытлыҡ-) *к. һир.* Һытылып, ҡыҫылып ағыу. *Бытлығып сығыу.*

**БЫТМЫҠАЙ** *с. диал. кар.* **былҡы** 1.

**БЫТЫЙ** *с.* Һүҙгә әүәҫ, һөйләнсәк, бытылдаҡ (бәләкәй балаға ҡарата).

● *Бытый тик тормай, артына һуҡһың да ултырмай.* Мәҡәл.

**БЫТЫҠАЙ** *с. диал.* 1. Әрпеш.

**2.** *кар.* ҡыҫтыбый 2.

**БЫТЫЛДАҠ** *с.* Күп һөйләгән, һүҙгә әүәҫ, бытый (балаға ҡарата).

**БЫТЫЛДАУ** *к.* **1.** Быт-быт килеү (балаға ҡарата). *Бытылдығы сығыу.* ■ *Үҙе [ҡустым] әүәҫ шаярырға, бытылдап һүҙе бөтмәй.* А. Игебаев.

**2.** *күсм.* Юҡ-барҙы һөйләү. *[Өмөгөлсөм:] Эй хоҙайым, ярамағанды, артыҡты бытылдап ташланыммы икән әллә?* З. Биишева.

**БЫТЫЛЫУ** *к. диал. кар.* **бүҫелеү** 2, 3.

**БЫТЫМЫР** *с. диал.* Бытый.

**БЫТЫР** *окш.* Мотор тоҡанғанда йәки автоматтан бер ыңғай атҡанда сыҡҡан тауышты белдергән һүҙ. *Бытыр итеү.*

**БЫТЫР-БЫТЫР** *окш.* **1.** Ҡабат-ҡабат бытыр иткән тауышты белдергән һүҙ. *Бытыр-бытыр итеү. Бытыр-бытыр килеү.*

**2.** Шәп итеп, өҙлөкһөҙ һөйләгән тауышты белдергән һүҙ. *Бытыр-бытыр һөйләшеү.*

**БЫТЫРЛАҠ** *с.* Бытырлап һөйләй торған. *Бытырлаҡ кеше.*

**БЫТЫРЛАУ** *к* **1.** Бытыр-бытыр итеү, бытыр-бытыр килеү. *Мотор бытырлап торҙо ла бер нисә тапҡыр сөскөрөп алғас, эшләй башланы.* Ә. Вәли.

**2.** Ҡабаланып, өҙлөкһөҙ һөйләү. *Бытырлығы сығыу.* ■ *Бытырлай биребеләк һөйләшә торған кеше булғанлыҡтан, уның [һөйләүсенең] ҡайһы бер һүҙҙәре ишетелмәй ҡала.* К. Мәргән.

**БЫТЫРЫЙ** *и. диал.* Бәрҙе.

**БЫТЫРЫУ** *к. диал.* Болартыу.

**БЫТЫШ** *с. диал.* Булдыҡһыҙ.

**БЫТЫШЫУ** *к. диал.* Бытҡашыу.

**БЫУ** *и.* **1.** Дымлы нәмәнән земберләп күтәрелгән шыйыҡ томан. *Быу бөркөп торған баҫыуҙа сәсеүҙәр ҡыҙыу бара.* Р. Ниғмәти.

**2.** Ҡайнар һыуҙан күтерелгән аҡ томан; боҫ. *Быуға тотоу.* ■ *Һәр ҡасан ҡыҙҙырһа көн, диңгеҙ йөҙө ҡайнарланып, быу булып күккә оса ла һыу булып ергә төшә.* Ш. Бабич.

**3.** Йылы һауа менән һыуыҡ һауа аралашҡанда хасил булған ҡуйы аҡ томан. *Аттарының өҫтөн аҡ бәҫ каплаған, морондарынан оҙон быу сығарып, саҡ атлап баралар.* Б. Бикбай. / Шул томандан тәҙрәгә һәм башҡа нәмәгә ҡунған дым, быуаҡ.

**БЫУА** [1] *и.* **1.** Быуып яһаған һыу һаҡлағыс. *Тирмән быуаһы.* ■ *Павловка һыу һаҡлағысы — быуаларҙың иң ҙуры.* М. Хисмәтов.

**2.** Шул һыу һаҡлағысты тотоу өсөн ағас, таш менән нығытып яһалған кәртә. *Быуа быуыу.* ■ *[Хәлимулла:] Ямғырҙы әйтәм, шәп яуа бит. Тирмәнсенең быуаһын да йырып ебәрер әле.* С. Агиш. **Быуа быҫыу** *диал.* быуа быуыу.

♦ **Быуа быуырлыҡ** бик күп.

**БЫУА** [2] *и.* Ҙур булмаған ваҡыт аралығы. *Еләҫ ел иҫеп үтте лә, сарсаған халыҡтың теләгән үтәгәндәй, ике быуа килеп, ямғыр һибәләп үтте.* С. Кулибай. / Туҡтап ял алғанға тиклемге эш ваҡыты; һыуһын, тына. *Кис менән бер быуа бесән сабып ҡайттыҡ.*

**БЫУАҒЫТЫУ** *к. диал. кар.* **быуланыу** 3. *Өй бүрәнәләре быуағытып тора.*

**БЫУАҘ** *с.* Ҡарында балаһы бар (малға ҡарата). *Быуаҙ бейә. Быуаҙ кәзә. Быуаҙ һыйыр.*

**БЫУАҘЛАУ** *к. кар.* **быуаҙыу.**

**БЫУАҘЛЫҠ** *и.* Быуаҙ булған хәл. *Быуаҙлыҡ дәүере.*

**БЫУАҘЫУ** *к.* Быуаҙ хәлгә ҡалыу (малға ҡарата). *Һыйыр быуаҙыған.*

**БЫУАҠ** [1] *и.* **1.** Тәҙрәгә һәм башҡа нәмәгә ҡунған дым, бөрсөк-бөрсөк тир; быу.

**2.** *диал. кар.* **ҡырау** 1.

**БЫУАҠ** [2] *и.* Айырым-айырым бүленеп торған нәмәнең бер бүлеге. *Бер-бер артлы теҙелеп киткән ҡулдәрҙең бер быуағы.*

**БЫУАҠ** [3] *и. диал.* Бабасы.

**БЫУАҠ-БЫУАҠ** *с.* Быуаҡтарҙан торған, быуаҡ [2] барлыҡҡа килтергән. *Кәмәлекәй буйҙары әй юл булыр, быуаҡ-быуаҡ ҡына ҡул булыр* (Халыҡ йырынан).

**БЫУАҠЛАНЫУ** [1] *к.* Дым менән, бөрсөк-бөрсөк тир менән ҡапланыу (тәҙрәгә һәм башҡа нәмәгә ҡарата).

**БЫУАҠЛАНЫУ** [2] *к.* Айырым-айырым, бүлкәт-бүлкәт булып бүленеү. *Бала туп-тумалаҡ, ҡулдары быуаҡланып тора.*

**БЫУАНАҠ: быуанаҡ ҡабырға** *диал. кар.* **ҡулан.**

**БЫУАР: быуар йылан** *кар.* **йылан.**

**БЫУАРТЫУ** *к. диал.* Ҡыҫтаҡлау. *«Йә, йә, әйт!» — тип, теге малайҙар Зөбәйҙе быуарта башланы.* Ж. Кейекбаев.

**БЫУАТ** [1] *и.* **1.** Йөҙ йыл иҫәбе менән йөрөтөлгән ваҡыт араһы. *Ярты быуат.* ■ *Беҙҙең эраның 7 быуатында .. гәрәп халҡы араһында ислам дине барлыҡҡа килә.* Т. Баишев.

**2.** Ни менән дә булһа билдәләнгән бер тарихи осор. *Таш быуаты. Урта быуаттар.* ■ *Мин бында [әҫәремдә] Аҡмулла быуатына ҡағылмайым.* Д. Юлтый. *Әле төҙөү осоро — ташҡын быуат, синфи көрәш әле бөтмәгән.* Ғ. Амантай.

♦ **Быуаттар буйы** *йәки* **күп быуат буйы** бик оҙаҡ ваҡыт. *Һәр осҡа күп быуат буйы тупланған тәжрибәнән сығып эш итә.* Н. Бикбулатов.

**БЫУАТ** [2] *и. диал. кар.* **быуаҡ** [2].

**БЫУҒАЛАҠ** *и.* Йәнлекте муйынынан эләктереп күтәрер өсөн бөгөлгән ағас осона ҡуйылған тоҙаҡ. *Ҡуян шаҡыларына [Туҡмуйыҡ] ағас бөгөп, быуғалаҡтар ҡуйҙы.* Ғ. Ибраһимов.

**БЫУҘЫРЫУ** *к. йөкм. кар.* **быуыу.** *[Батша] түрәләрҙе баш ҡылып, ил теләгән быуҙырып, арыҫландай ирҙәрҙе йыуаш ҡуйҙай итте инде* (Ҡобайырҙан).

**БЫУЛАНДЫРЫУ** *к.* Быуға тотоу, быулы итеү. *Стаканды быуландырыу.*

**БЫУЛАНЫУ** *к.* **1.** Быу булып ҡалҡыу. *Тын, тәмәке төтөнө һымаҡ булып быуланып, һауаға күтәрелде.* Һ. Дәүләтшина.

**2.** Быу сығарыу. *Тирә-яҡ ҡояш нурҙарына ҡойоноп быулана.* Ф. Иҫәнғолов.

**3.** Быу менән, бөрсөк-бөрсөк дым менән ҡапланыу. *Быуланған тәҙрә.*

**БЫУЛАУ** *к. кар.* **быуландырыу.**

**БЫУЛЫҒЫУ** (быулыҡ*ғ*) *к.* Тын юлы ҡыҫылып, һулыш туҡтау. *Быулығып үлеү.* ■ *Һул яҡ мөйөштәге яралы һалдат ҡысҡыра, әллә быулыға инде.* И. Ғиззәтуллин.

♦ **Өн быулығыу** *шул уҡ* **өн быуылыу** (*кар.* **өн** [1] 2).

**БЫУЛЫҠ** *и.* Ҡыйыҡлап яһап, ҡаҙан өҫтөнә аҫып ҡуйылған таҡта.

**БЫУМА** *и.* Тын быуылып, тотоп тартыштырып, ҡапыл ҡолата торған ауырыу. *[Фәхри — Яҡупҡа:] Бына бит, күрше, бәлә аяҡ аҫтында ғына ята икән, быумам тотоп, иҫтән яҙғанмын.* Б. Бикбай.

♦ **Быума йүтәл** тын бирмәй быуып, оҙаҡ йүткергән йүтәл. *[Сәлихтең] әсәһе һаман сирләй, уны быума йүтәл ғазаплай.* Х. Мохтар.

**БЫУМАЛЫ** *с.* Быума ауырыулы. *Быумалы кеше.*

**БЫУНАҠ** *и.* Өлөш-өлөш булып, бер буйға теҙелеп торған нәмәнең бүлкәттәре араһындағы билдә; быуынтыҡ. *Ҡамылдың быунағы. Ҡамыштың быунағы.*

**БЫУНАҠЛАНЫУ** *к.* Быунаҡлыға әйләнеү, быунаҡлы булыу. *Ҡамыштың һабағы быунаҡланып тора.*

**БЫУНАҠЛАУ** *к.* **1.** Быунаҡ яһау, быунаҡлы итеү.

**2.** Быунағын ҡырҡыу йәки һындырыу.

**БЫУНАҠЛЫ** *с.* Быунаҡтарҙан торған. *Быунаҡлы ҡамыл.*

**БЫУЫЛДАУ** *к.* Туҡтауһыҙ олоған кеүек илау. *Бынау бала быуылдап тик йөрөй.*

**БЫУЫЛМА** *и.* Тын, ҡан, аш, эсәк юлдарының быуылып, нык ауыртыуы; спазма.

**БЫУЫЛТЫУ** *к.* Үтә алмаҫлыҡ итеп тотҡарлау, бикләү. *Тынды быуылтыу.*

**БЫУЫЛЫУ** *к.* **1.** *төш. кар.* **быуыу.** *Бөхтә итеп тегелгән гимнастерка яҡшы ҡайыш менән быуылған.* Д. Юлтый.

**2.** Хәрәкәт итә, үтә алмаҫлыҡ булып тотҡарланыу, бикләнеү. *Ҡан тамыры быуылыу. Тын быуылыу.*

**3.** Аға алмаҫлыҡ булып кәртәләнеү. *Быуылып ятҡан һыу.*

**4.** Тын юлы ҡыҫылып, һулыш туҡтау. *Быуылып ҡолау. Быуылып үлеү.* / Тын ала алмау. *Быуылып көлөү. Быуылып йүткереү. Быуылып өрөү.* ■ *Быуылып илай [әбей], быуылып-быуылып илай ҡайғылары ташып барғанға.* Х. Ҡунаҡбай. / Көслө хискә тулышыу. *Күҙ йәшенә быуылыу.* ■ *Ул [Зәлифә] эсендәге бөтә ҡайғыға*

*быуылып, Сафура менән бергә иланы.* Һ. Дәүләтшина.

**БЫУЫН** [1] *и.* **1.** Кеше, йәнлек организмындағы һөйәктәрҙең йәки кимерсәктәрҙең ҡуҙғалмалы булып, бер-беренә тоташҡан, ялғанған урыны. *Бармаҡ быуыны. Бәкәл быуыны. Терһәк быуыны. Тубыҡ быуыны. Быуын сығыу. Быуын ултыртыу. Быуын һыҙлау.* ■ *Оҙон юлдар уның быуындарын, елек һөйәктәрен талдырған.* Б. Вәлит.

**2.** *күсм.* Тәндәге көс, хәл. *Быуын бөтөү. Быуын ҡалмау.*

**3.** *бот.* Башаҡлылар һабағын, ҡайһы бер үҫемлек олонон өлөш-өлөшкә бүлеп торған урын. *Бамбук ағасының быуыны.* ■ *Кисәгенән матур көн башлана, бер быуынға ҡалҡты ужымдар.* С. Кулибай.

**4.** Бер буйға теҙелеп, өлөш-өлөш булып торған нәмәнең бер бүлкәте. *Сыйыр быуыны. Торба быуыны. Ракета быуыны.* ■ *Пароход артынан ҡала барған бейек тулҡындар һалды быуындары менән бәүетә.* Ж. Кейекбаев.

**5.** Ҡатмарлы телмәр йәки көйҙөң, йырҙың айырым-айырым өлөштәре. *Ритмик быуын.* ■ *Тәүгеһенең йыры һигеҙ быуын, ә икенсеһе ике быуындан арттыра алмай..,— ти ҡарт һандуғастар тынған арала.* Ә. Чаныш.

**6.** *мат.* Сикләүһеҙ унарлы кәсерҙәге ҡабатланып килгән һандар төркөмө. *Окшаш быуындарҙы берләштереү.*

◆ **Быуын бушау** (*йәки* **йомшарыу**) хәлһеҙләнеү. *Көтмәгән ауыр ҡайғыны ишетеп Кәримдең быуындары бушаны.* Я. Хамматов. **Быуынға төшөү** 1) хәлде алыу, хәлһеҙләндереү. *Ҡымыҙ эскәйнем, быуынға төштө;* 2) бер нәмәне ныҡытып, кешенең йәненә тейеү, маҙаһын ҡоротоу. *Атай, ат алып бир,— тип [улы] атаһының быуынына төшә* (Әкиәттән). **Быуынға ултырыу** 1) быуын хасил итеү (игенгә ҡарата); 2) эш эшләр йәшкә етеү; көскә ултырыу; 3) хужалыҡ яғынан хәлләнеү. *[Гәрәй] пар тирмәнен ҡабат ҡотайып, быуынға ултырып алған Иван Лесинга һатты.* Б. Бикбай. **Быуынға һикереү** *диал. ҡар.* **быуынға ултырыу 1. Быуынға һуғыу** *диал.* бәкәлгә һуғыу (*ҡар.* **бәкәл**). **Быуынды алыу** 1) хәлде бөтөрөү, арытыу. *Ҡар йырып, текә тауға артылыу .. быуынды ала.* Н. Мусин; 2) тормош дәртен бөтөрөү, йәшәр көстө бөтөрөү. **Быуын ҡаҡшау** 1) көс, хәлдән яҙыу, хәлһеҙләнеү. *Ҡурҡыуымдан быуыным ҡаҡшаны;* 2) хужалыҡта, ил араһында көсһөҙ булып ҡалыу. *Ҡаҡшаны быуыны, тамам ҡаҡшаны, элек бит урамға һыймаҫтай булып йөрөй торғайны ул [Гәрәй].* Б. Бикбай. **Быуын** (*йәки* **аяҡ быуыны**) **ҡалтырау** ҡурҡыуға төшөү; ҡаушау. *[Ҡәләмбай:] Быуындарым ҡалтырап ҡаушаным да киттем.* Т. Хәйбуллин. **Быуын ҡатып көлөү** бик ихлас итеп, ныҡ көлөү; эс ҡатып көлөү. *Ағалары унан [Кейеҙбайҙан]: Тотторған, ти, ат һиңә ҡойроғон,— тип, быуындары ҡатып көлдө, ти* (Әкиәттән). **Быуын ҡороу** хәлдән тайыу. **Быуын ҡатыу** үҫеп нығыныу; көскә ултырыу. *Быуыны ла ҡатмаған йәш балалар колхозда эшләп йөрөнө.* **Быуын таралыу** тән иҙерәп, ойоу. *Йылыла малайҙарҙың быуыны таралып, күҙҙәре үҙенән-үҙе йомола башланы.* Ф. Иҫәнғолов. **Быуыны йомшаҡ** эшкә булдыҡлылығы етмәгән кешегә ҡарата әйтелә. **Ҡырҡ быуынынан турап, утҡа һалһаң да үс ҡанмаҫ** ҡаты асыуҙы белдергән һүҙ. *[Сурағол:] Ҡан илатҡан был түрәләрҙе ҡырҡ быуынынан турап утҡа һалһаң да үс ҡанмаҫ.* Т. Хәйбуллин. **Әл быуын** хәлһеҙ, кәрһеҙ.

**БЫУЫН** [2] *и.* **1.** Баҫҡыс-баҫҡыс килгән туғанлыҡтың бер үк кимәлендә торған кешеләр.

**2.** Бер осорҙа йәшәп, йәш араһы яҡын булған кешеләр. *Бер быуын кешеләре. Йәш быуын. Оло быуын. Киләсәк быуын.* ■ *Агиҙелкәй һинең буйҙарыңда нисә быуын ғүмер кисергән.* Р. Ниғмәти.

**3.** Кеше ғүмеренең билдәле дәүере. *Үҙ быуынында күпте күргән, күпте ишеткән әлеге Әхмәҙулла бабай менән беҙ текә .. ҡая янында ултырабыҙ.* Ә. Вахитов.

**БЫУЫНДАШ** *и. ҡар.* **замандаш.**

**БЫУЫНЛАНЫУ** *ҡ.* Быуын [1] (3 мәғ.) барлыҡҡа килтереү (башаҡлы игенгә, ҡайһы бер олонло үҫемлеккә ҡарата). *Арыш быуынлана башланы.*

**БЫУЫНЛАУ** *ҡ.* Быуынынан айырыу, быуынлы еренән ҡырҡыу. *Һарыҡ түшкәһен быуынлау.*

**БЫУЫНЛАШЫУ** *ҡ.* Быуын [1] (1 мәғ.) булып тоташыу.

**БЫУЫНЛЫ** *с.* Быуындарҙан [1] (4 мәғ.) торған. *Быуынлы торба. Күп быуынлы ракета.*

**БЫУЫНТЫҠ** *и.* **1.** *бот.* Башаҡлылар һабағының, ҡайһы бер үҫемлек олононоң быуын кеүек төйөрләнеп торған ере; быунаҡ. *Үлән һабағының быуынтығы.*

**2.** *зоол.* Ҡайһы бер умыртҡаһыҙ хайуандарҙа кәүҙәнең бер бүлеге йәки аяҡтарҙың состав өлөшө. **Быуынтыҡ аяҡлылар** *зоол.* кәүҙәләре бүлектәргә (сегменттарға) бүленгән, ә аяҡтары ҡабатланып килгән бер тигеҙ өлөштәрҙән торған умыртҡаһыҙ хайуандарҙың иң юғары төрө.

**БЫУЫНТЫҠЛАНЫУ** *ҡ.* Быуынтыҡлы булыу. *Ҡамыш быуынтыҡлана башлаған.*

**БЫУЫНТЫҠЛЫ** *с.* Быуынтыҡтарҙан (1 мәғ.) торған. *Бамбуктың быуынтыҡлы олоно.*

**БЫУЫНҺЫҘ** *с.* Хәлһеҙ, көсһөҙ. *Быуынһыҙ булыу.* ■ *Бирмәҫ быуынһыҙ булып иларға кереште, ти* (Әкиәттән).

**БЫУЫНҺЫҘЛАНЫУ** *ҡ.* Тәнде тота алмаҫ булыу; бушаҡланыу.— *Быуынһыҙланып тегеләй-былай сайҡала.* И. Ғиззәтуллин.

**БЫУЫНЫУ** *ҡ.* Билде быуыу. *Ебәк кенә билғау — буй уҡа, быуынһам да тормай билемдә* (Халыҡ йырынан).

**БЫУЫУ** *ҡ.* **1.** Бау йәки башҡа нәмә менән уратып ҡыҫыу. *Ҡулды быуыу. Быуып бәйләү.* / Уратып бәйләү (билде). *Билде быуыу. Ҡайыш быуыу.* ■ *Сәлмән .. тороп, йәһәт кенә сәкмәнен кейеп, билен һығып быуған* (Әкиәттән). / Билдәге ҡайыш, билғауға тағыу. *Донъяға Күсәк бала тыуҙы инде, биленә алмас ҡылысын быуҙы инде.* «Бабсаҡ менән Күсәк».

**2.** Берәй нәмәнең хәрәкәтен кәртәләү. *Тонсоу һауа һулышты быуа.* ■ *Зариф ҡарт Муйыллы йылғаһын быуып .. балыҡ үрсетте.* Б. Бикбай.

**3.** Ныҡ ҡыҫып, тын юлын бикләү. *Муйынды быуыу.* ■ *Мәскәй ҡапыл Тамыр батырҙың үңәсенә йәбешкән дә быуа башлаған* (Әкиәттән).

/ Муйынды һығып үлтереү. *Быуып ташлау.* ■ *Түҙемлектән сыҡкан крәҫтиәндәр .. адвокат өйөнә барған, уны быуып ырғытырға уйлаған.* Д. Юлтый. / Тынды ҡыҫып, тотош тартыштырып, ҡапыл ҡолатыу (быумаға ҡарата). *Быума быуыу.*

**4.** *кар.* **тамаҡлау.** *Ошо аҙна эсендә генә дүрт-биш һарыкты бүре быуып китте.* М. Тажи.

**5.** *күсм.* Ирек бирмәй ҡыҫыу; сикләү. *Ихтыярҙы быуыу. Теләкте быуыу.*

♦ **Бил быуыу** *кар.* **бил. Билде биштән быуып** *кар.* **бил. Быуа быуырлыҡ** *кар* **быуа**[1]. **Күҙ быуыу** *кар.* **күҙ. Һеңерен быуыу** *кар.* **һеңер. Юлды быуыу** *кар.* **юл.**

● *Яман тыуыр, юлды быуыр.* Мәҡәл.

**БЫХ** *окш.* Ауыр итеп һулыш алғанда сыҡкан тауышты белдергән һүҙ. *Бых итеү.*

**БЫХ-БЫХ** *окш.* Ҡабат-ҡабат бых иткән тауышты белдергән һүҙ. *Бых-бых итеү. Бых бых килеү.*

**БЫХЫЛДАТЫУ** *к. йөкм. кар.* **быхылдау.** *Малайҙарға етә кала: сыбыҡ менән һыҙыра тартып, туйған һыйырҙарҙы быхылдатып, .. кем уҙармандан саптырып, өйҙәренә алып ҡайталар.* Һ. Дәүләтшина.

**БЫХЫЛДАУ** *к.* Бых-бых итеү, бых-бых килеү. *Быхылдағы сығыу.* ■ *Альберт уның [Бикһимерҙең] артынан быхылдап йүгереп килеп етте.* Ф. Иҫәнғолов.

**БЫХЫУ** *с. диал. кар.* **тыңҡыш**[1].

**БЫШ-БЫШ** *окш.* Шым ғына һөйләгәндә сыҡкан тонок тауышты белдергән һүҙ. *Быш-быш итеү.* ■ *Рамазан кағыҙ алды ла .. яҙа башланы. Быш-быш килеп уны укып караны.* Ф. Иҫәнғолов.

♦ **Быш-быш хәбәр** асыҡтан-асыҡ һөйләмәй, йәшерен генә һөйләнгән хәбәр. *Һалдаттар араһында ҡолаҡтан ҡолаҡҡа быш быш хәбәр китә.* И. Ниғмәтуллин.

**БЫШҠЫРТЫУ** *к. йөкм. кар.* **башҡырыу.** *Йылҡы малы ятаҡлап ауырыһа, ялынан йәки ҡойроғонан ҡылын алып танауына тығалар. Танауын ҡул менән ҡыҫып тотоп, атты бышҡыртырға тырышалар.*

**БЫШҠЫРЫНЫУ** *к.* Бер ыңғай ҡабат-ҡабат бышҡырыу. *Зөлҡәрнәйҙең .. аты тибенгеләп, бышҡырынып ҡуйған.* Н. Иҙелбай.

**БЫШҠЫРЫУ** *к.* **1.** Шурылдатып танауҙан ҡапыл өрөү (боланға, атҡа ҡарата). *Серәкәй керһә генә, беҙҙең аттар ялын һирпеп, ҡаты бышҡыра.* Ғ. Хәйри. *[Болан] бышҡырып, башын сайҡаны ла ялмап алды ваҡ тал япрағын.* Р. Ғарипов.

**2.** Бырх итеп ауыҙ-моронан һыу бөркөү (кешегә ҡарата). *Булат .. оҙаҡ итеп бышҡыра-бышҡыра йыуынды.* К. Мәргән.

**БЫШҠЫРЫШЫУ** *к. урт. кар.* **бышҡырыу.**

**БЫШЛЫҒЫУ** (бышлыҡ*) *к.* **1.** Эҫеләп, бешеп киткәнлектән, ауыр тын алыу. *Мәҙрәсәгә гәйәт тығыҙ.. Бөтә кеше тиргә батып, бышлығып ултыра.* М. Ғафури.

**БЫШЛЫҠТЫРЫУ** *к. йөкм. кар.* **башлығыу** 1.

**БЫШТЫҠ** *с.* Ҡыҫҡа муйынлы, итләс (кешегә ҡарата).

**БЫШТЫРЛАУ** *к. диал.* Мыштырлау.

**БЫШЫЛДАУ** *к.* Быш-быш итеү, быш-быш килеү. *Бышылдап һөйләү. Бышылдығы сығыу.* ■ *[Хәлимов] ауыҙын минең ҡолаҡҡа ҡуйып бышылдай башланы.* Д. Юлтый.

**БЫШЫЛДАШЫУ** *к. урт. кар.* **бышылдау.**

**БЫШЫМ** *и.* **1.** Бәкәл тәңгәленән бөрөп бәйләнә торған ҡыҫҡа киндер ҡуныслы йомшаҡ күн ҡата.

**2.** Ҡата, ҡынйыраҡ кеүек аяҡ кейемдәренең туланан йәки киндерҙән тегелгән бөрөп бәйләп ҡуймалы ҡунысы. *Тула бышым. Ҡынйыраҡ бышымы. Бышым тегеү.*

**БЫШЫМ-БЫШЫМ** *р.* Аҫтыртын, йәшерен. *[Яубикә:] Аҡмырҙа ла шул ҡаскындар менән бышым-бышым ғына эш итә.* Б. Бикбай.

**БЫШЫМЛЫ** *с.* Бышымы (2 мәғ.) булған. *Бышымлы ҡата. Бышымлы сабата.*

**БЫЯҠ** *и. ҡыҫҡ. ф. һөйл.* Был яҡ.— *Ҡыу, тиҙерәк ҡыу! Быяҡҡа ҡайыр!* Я. Хамматов.

**БЫЯЛА** *и.* Кварц ҡомон иретеп, махсус ысул менән эшкәртеп яһаған үтә күренмәле ҡаты нәмә. *Аҡ быяла. Күҙлек быялаһы. Тәҙрә быялаһы. Быяла заводы. // Быяла һауыт.*

♦ **Быяла мамыҡ** быяла саңы ҡушып, мамыҡҡа окшатып яһалған синтетик материал. **Быяла сүс** быяла саңы ҡушып, сүскә окшатып яһалған синтетик материал. **Ер быялаһы** ҡатланып-ҡатланып торған йылтыр минерал. **Шәм быялаһы** *кар.* **ҡыуыҡ** 4.

**БЫЯЛАЛАУ** *к.* Быялалы итеү, быяла ҡуйыу. *Тәҙрәне быялалау.*

**БЫЯЛАЛЫ** *с.* Быяла ҡуйылған. *Быялалы шкаф.*

**БЫЯЛАСЫ** *и.* **1.** Быяла ҡайнатыусы.

**2.** Ишек, тәҙрәгә быяла ҡуйыусы.

**БӘ, бә-ә-ә** *окш.* Кәзә, һарыҡ баҡырған тауышты белдергән һүҙ. *Бә-ә-ә итеү.*

**БӘБЕКӘЙ** *и. диал.* Бәпес.

**БӘБЕРКӘ** [*рус.* оборка] *и. диал.* Бала итәк; ҡатмар. *[Гөльямал] байрамдарҙа ғына кейә торған бәберкәле күлдәге өҫтөнән күп мәрйенле түшелдереген һалып, сәсен икегә ярып үрҙе.* Я. Хамматов.

**БӘБӘЙ**[1] *и. диал.* Бәпес.

**БӘБӘЙ**[2] *и. диал.* Бәберкә.

**БӘБӘЙЛӘҮ** *к. диал.* Бәпесләү.

**БӘБӘК**[1] *и.* 1. Үҫә торған һәр нәмәнең башланғыс яралғыһы. *Теш бәбәге.* / Яңы ғына шытып сыҡкан йәш үҫенде. *Көн күрергә ынтылған ыуыҙ ғына бәбәк тә ниндәй ҡаты асфальтты тишеп сыға.* Ф. Иҫәнғолов.

**2.** Сәскәнең үҙәгендәге емешлек. *[Бал ҡорто] оҙон томшоғон сәскәнең һары һеркәле бәбәгенә батырҙы.* Ф. Иҫәнғолов.

**3.** *диал. кар.* **бәпкә**[2].

♦ **Бәбәк ярыу** 1) орлоҡтан морон төртөп, шытып сығыу; 2) *күсм.* барлыҡҡа килеү, башланғыс алыу. *Күңелдәргә ҡанат ҡуйҙы йәшлек яҙы, йөрәктәрҙә һөйөү тәү ҡат бәбәк ярҙы.* Ш. Бикҡол.

**БӘБӘК**[2] *и.* **1.** (*йәки* **күҙ бәбәге**) Күҙ ҡабағының керпек үҫкән сите, керпек төбө. *[Мөләк ағайҙың] атылып сыҡкан күҙ йәштәре, бәбәктәренән ашып, битен йыуып ағып төштө.* Т. Хәйбуллин.

**2.** Орлоҡто, бөрөнө йомоп торған көп. *Бәбәктәрен тишеп ҡояш нурына ынтыла бөрөләр.* М. Тажи.

**3.** *диал.* Күҙ ҡараһы.

**4.** (*йәки* **колаҡ бәбәге**) *диал. кар.* **йәрпесәк**[1].

**БӘБӘНӘК** *и. диал. кар.* **бәбәк**[1] 1, 2.

**БӘҒДЕ** [*ғәр.*] *бәйл. иҫк.* Һуң. *Йәнә солох бәғдендә Бирҙебәк [менән] солтан Мансур нәһере Иҙелдең ике тарафынан мөкамәрә өсөн уҡ атты.* «Башҡорт шәжәрәләре», 1960. *[Сабир мулла:] Әммә бәғде мөфти хеҙмәттәренә .. үпкә һүҙем бар.* Б. Ишемғол.

**БӘҒДӘ** [*ғәр.*] *р. иҫк.* Шунан һуң, шунан. *Бәғдә туған энем Саримға, бәғдә хәләл ефетемә күптән-күп доғаи сәләмдәремде күндергәйһеҙ.* Ғ. Хәйри.

♦ **Бәғдә-л-сәләм** *кит.* сәләмдән һуң. *Һеҙҙәргә бәғдә-л-сәләм ғибрәт кәләм, һәр төрлө мәғәнә менән ҡисса яҙҙым.* Аҡмулла.

**БӘҒЕМБӘ** *и. диал. кар.* **бәпембә** 1.

**БӘҒЕР** *и.* **1.** Кешенең бөтә хис, тойғоһон туплаған эске донъяһы; күңел, йөрәк. *Ҡара ҡандар тама бәғеремдән яуыз ҡуллы яҙмыш ҡыҫҡанда.* С. Ҡудаш. **Ҡаты** (*йәки* **таш**) **бәғер** аяй, йәлләй белмәҫ. *[Фәтхи:] Иламайым икән — таш бәғер тип уйламағыҙ, беҙҙең бабайҙар ҙа иламаған.* С. Агиш.

**2.** *эйл. ф.* **бәғерем** Ҡәҙерле күргән кешегә иркәләп, яратып әйтелә. *Барыбер бүтәндәргә ҡыҙыҡмам, йәнем, бәғерем, һине онотмам.* А. Игебаев.

♦ **Бәғергә инеү** күңелде иретеү. **Бәғергә тоҙ һалыу** кешелә әсе тойғо уятыу; әрнетеү. **Бәғергә үрелеү** йылы, татлы хистәр уятыу. **Бәғерҙе иретеү** кешелә йылы тойғо, яҡшы ҡараш уятыу. **Бәғерҙе телеү** бик ныҡ әрнетеү, әсендереү. *Эй, ул көлдө, бәғеремде телде.* Б. Мирзанов. **Бәғер итен ашау** бик ныҡ үртәп әрнетеү. **Бәғер [ем] киҫәге** ҡәҙерле күргән кешегә яратып әйтелә. **Бәғер ҡатыу** ҡаты хис уяныу. *Өйгә яҡынлашкан һайын Мәрйәмдең йәштәре кибә, бәғере ҡата барҙы.* Р. Низамов. **Бәғер ҡороу** бик ныҡ ҡайғырыу, әсенеү. *Көнө-төнө бәғерем ҡорой исемем һалдат булғанға* (Бәйеттән). **Бәғер ҡыйылыу** 1) йән әсеү, йөрәк әрнеү. *Ике күҙҙән ерәүгә ҡалғас, ҡыйыла бәғерҙәрем* (Халыҡ йырынан); 2) яфа сигеү, тәҡәтһеҙ булыу. *Көнө-төнө һуғыша-һуғыша, бөттө йәндәр ҡыйылып* (Бәйеттән). **Бәғерҙе өҙөү** нескә, әрнеткес хис уятыу. *Гөлдәр араһында һандуғастар сут-сут һайрап, бәғерҙәрем өҙәләр.* Д. Юлтый.

**БӘҒЕРҘӘЙ** *и. диал. кар.* **ташбаш** 1.

**БӘҒЕРЛЕ** *с.* Аяй, йәлләй белеүсән. *[Һомай — Шүлгәнгә:] Ҡан көҫәгән, йәш түккән, күптәр башына еткән, ҡан эсергә үкталған үҫал йөрәгең бөтһөн, бәғерле йөрәк үҫһен.* «Урал батыр». **Ҡаты** (*йәки* **таш**) **бәғерле** аяй, йәлләй белмәй торған. *Уның йырҙары шул тиклем моңло булған — иң ҡаты бәғерле кешенең күңеле лә балауыҙ һымаҡ ирер булған.* Ә. Вахитов.

**БӘҒЕРҺЕҘ** *с.* Аяй, йәлләй белмәй торған. *[Мәһруй:] Ҡош телендәй генә хат яҙып ебәрһәгеҙ, тигән бит, өҙөлөп-өҙөлөп һораған. Бигерәк тә бәғерһеҙ икәнһең, Сәрүәркәйем.* Х. Ибраһимов.

**БӘҒЕРҺЕҘЛЕК** *и.* Мәрхәмәтлек, шәфҡәтлектең булмауы, аяй, йәлләй белмәү хисе. .. *Күрәһегеҙ, ниндәй әсәләр була: бала таба, ләкин ҡарап үҫтерергә теләмәй. Ниндәй бәғерһеҙлек!* «Башҡортостан ҡыҙы», 1986, № 4.

**БӘҒЕҪ** [*ғәр.*] *и.* Дини ҡарашса, үлгән кешеләрҙең терелеп ҡәберҙәрен ҡалҡып сығыуы (ҡиәмәт көнөндә). *«И хоҙай, ҡотҡар!..» — тинек, көттөк бәғеҫ, көттөк хөшөр.* М. Ғафури.

**БӘҒЗАН** *р. кар.* **бәғзән.**

**БӘҒЗЕ** [*ғәр.*] *билдһ. а.* Ҡайһы, ҡайһы бер. *Бәғзе [бер] ваҡыт. Бәғзе [бер] кеше. Бәғзе [бер] эш.* ■ *[Шайтан йылғаһының] һыуҙары гипс токомдарын иретә лә төрлө ҡыуышлыҡтар яһай. Бәғзе ерҙәр ҙә был ҡыуышлыҡтарҙың түбәһе емерелеп төшә.* Д. Бураҡаев. *Куләм артынан ҡыуып, бәғзе предприятие етәксеһе хеҙмәтләндереү прейскурантын да ҡиммәтерәк итергә ынтыла.* «Совет Башҡортостаны», 1986, 23 ғинуар. / **бәғзеләр** *и. мәғ.* Ҡайһы бер кешеләр. *Бәғзеләрҙән ерҙә аҡ нур ҡала, бәғзеләрҙән ҡала күләгә.* Р. Бикбаев.

**БӘҒЗӘН** [*ғәр.*] *р. иҫк.* Ҡайһы ваҡыт, ҡайһы саҡ; бәғзан. *Йөрәгемдә бәғзән шиғтәр тыуһа, һинең һүрәтеңде аламын.* Д. Юлтый.

**БӘҒИД** [*ғәр.*] *с. иҫк. кит.* Алыҫ.

**БӘҒӘНӘШ** *и.* Ышыҡ урында, йүкә араһында ҡапрайып үҫкән киртләс япраҡлы, мурт ботаҡлы күп йыллыҡ үлән (тамырын ҡайнатып эсәләр).

**БӘД** [*фарс.*] *с. иҫк. кит.* Насар, яман. *Дәүләттә әҙәм бармы ҡотормаған, эстәрен бәд ғөманға тултырмаған.* Аҡмулла.

**БӘДБӘХЕТ** [*фарс.*] *с.* Ҡәһәрле, ҡәбәхәт. — *Ҡарт көнөмдә битемә ҡара яҡты .. бәдбәхет ҡыҙыҡай! Ух! — тип екеренгән Олоғатай.* Н. Иҙелбай. / Әрләгәндә әйтелә.— *Хәсис, бәдбәхет! — ти мулла.— Сәлләмде бир, дошман!* З. Биишева.

**БӘДДОҒА** [*фарс.*] *и.* Насар теләк, ҡарғыш. *Бәддоға ҡылыу. Бәддоға уҡыу.* ■ *Фәүзиә бойокто.. Бының сәбәбен аңлап торған Шәмсениса инәй Айсыуаҡты төтәҫләне: «Әҙәмдең аяулы балаһын рәнйетһәң, бәддоға уҡырмын мин һиңә..* Т. Килмөхәмәтов. *Ҡул һырттары менән бит һыпырып, ул [мулла] бәддоға беҙгә уҡыны.* Ғ. Әмири.

**БӘДЕҮӘМ** *и. иҫк.* Иҫке мәҙрәсәлә дәреслек булып йөрөгән көйлө дин китабы.

**БӘДЕҮӘМСЕ** *и. иҫк.* Ысулы ҡәдим менән уҡытыу яҡлы кеше.

**БӘДНАМ** [*ғәр.*] *и. иҫк. кит.* Насар даны таралған исем; яманат. *Нисә йөҙ йыл иҙелдегеҙ ҡара пәрҙәләр аҫтында булып мәхрүм хөрриәттән, .. өйөлгән тау кеүек бәднамдар аҫтында итеп түҙем.* Д. Юлтый.

**БӘДӘЛ** [*ғәр.*] *и. иҫк.* **1.** Берәй нәмә өсөн түләнгән аҡса; взнос түләү. *[Ағалары — Йософка:] Ялған төшлә үҙеңде һөйҙөрҙөгөң, был [яфалы] көн шуның бәдәлелер.* «Йософ вә Зөләйха». *[Хөсәйенов:] Мин ул йәмғиәткә йылына 80 тин көмөш ағзалыҡ бәдәле түләйем.* С. Агиш.

**2.** Кешенең башҡа берәүгә ялланып хажға барыуы. // *Бәдәл хаж.*

**БӘДӘЛСЕ** *и.* Кешегә ялланып хажға йөрөүсе. *Бәдәлсе кеше.*

**БӘДӘН** [*ғәр.*] *и. иҫк.* Тән, кәүҙә. *Уның [Томбайҙың] улы Уралбай, ашаулыгы урамдай, бәдәне һимеҙ тулалы, ятһа урынынан тора алмай.* «Башҡорт шәжәрәләре», 1960.

**БӘДӘНЛЕ** *с. иҫк.* Ҙур кәүҙәле. *Бәдәнле кеше.*

**БӘДӘҮИ** [*ғәр.*] *с.* **1.** Күсмә тормошло. *Хужалыгы иң төшөнкө яктарҙа мал аҫраусылыҡ бәдәүи хәлдә була.* Ғ. Ғисмәти.

**2. бәдәүи ғәрәп** *и. мәғ.* Күсмә тормош менән йәшәгән сүл ғәрәбе. *Ғәрәбстан далаларында бәдәуиҙәр йәшәгән.*

**БӘҘАҒӘТ** [*ғәр.*] *и. кит. иҫк.* Башланғыс. *Әгәр булһа берәүҙең бер аҙ гәре, был бәҙагәттән арка биреп касыр имде* (Бәйеттән).

**БӘҘЕРЕБӘНЕЖ** [*фарс.*] *и. иҫк.* Һабаҡлы йомро төймә. *Әхмәт байҙар кеүек, хәҙер бер бәҙеребәнежгә бер ҡуй тиреһе алып булмай.* Ғ. Ғүмәр.

**БӘҘИҒ** [*ғәр.*] *с. иҫк. кит.* Бик яҡшы, гүзәл.

**БӘҘИҒӘТ** [*ғәр.*] *и. кит. иҫк.* Бик шәп, яҡшы нәмә.

♦ **Бәҙиғәт ашатыу** һыйлау.

**БӘҘРӘК** *и.* Бер башҡорт ырыуының исеме.

**БӘҘРӘФ** [*фарс.*] *и.* Тышҡа сыға торған урын; әбрәкәй.

**БӘҘӘНКӘЙ** [*баш хәреф менән*] *и. диал.* Етегән. *Бәҙәнкәй етеү. Өлкәр нисәү? Һарат менән Буҙат тик икәү* (Халыҡ йырынан).

**БӘЖЕҮ** *к. диал.* Быжыу.

**БӘЖӘНӘК** *и. иҫк.* Печенег.

**БӘЗ** [*ғәр.*] *и.* Арзанлы йоҡа кизе-мамыҡ тауар. // *Бәз кулдәк.*

**БӘЗЕР** *с.* Мызлап янып торған (күҙгә ҡарата). *Бәҙер күҙ.*

**БӘЗЛӘТЕҮ** *к. диал.* Бәзрәйтеү. *Күҙҙе бәзләтеп ҡарау.*

**БӘЗЛӘҮ** *к. диал.* Бәзрәйеү.

**БӘЗРЕЙ** *с. диал.* Бәзер.

**БӘЗРӘЙЕҮ** *к.* Мызлап янып текәлеү (күҙгә ҡарата). *Бәзрәйеп ҡарау. Күҙҙәре бәзрәйеп тора.*

**БӘЗРӘЙЕШЕҮ** *к. урт. кар.* **бәзрәйеү**. *Бәзрәйешеп ултырыу.*

**БӘЗРӘЙТЕҮ** *к.* Мызлатып, ныҡ итеп текәлтеү (күҙҙе). *Эткол кемдәндер йәшенгән кеүек, күҙҙәрен бәзрәйтеп, тирә-ягына ҡараны.* Ғ. Дәүләтшин.

**БӘЗӘКӘЙЛӘҮ** *к. диал.* Сәнскәкләү.

**БӘЙ**[1] *и.* **1.** Берәй нәмәне быуыу йәки ҡуша нығытыу өсөн бороп, ишеп әҙерләнгән еп; бау. *[Үмәр карт] капканың сус бәйе ныҡмы икән тип, кабат-кабат тартып ҡараны.* Һ. Дәүләтшина.

**2.** Мал-тыуар, эт-ҡошто китеп бармаһын өсөн, берәй нәмәгә ҡуша беркетә торған арҡан йәки сынйыр; бау. *Бәйгә ҡуйыу. Бәйҙәге эт.* ■ *Кейеҙбай .. бәйҙә торған кук толпарҙың теҙгенен сисә* (Әкиәттән). / *күсм.* Кешенең иркен тоткарлаған кәртә. *Бәйгә алыу. Бәйҙә тотоу. Бәйҙән ысҡыныу.*

♦ **Бәйҙән ысҡынған эт кеүек** бик шашкан, ҡоторған кешегә ҡарата әйтелә.

**БӘЙ**[2], **бәй-бәй** *ымл.* **1.** Аптырағанда әйтелә. *[Иркәбикә инәй:] Бәй, был һин түгелме һуң, Хәмит балам?* Ф. Рәхимғолова. / Уңай килгән бер хәлгә ғәжәпһенеп ҡыуанғанда әйтелә. *Мин туп-тура Өфөгә юл тоттом. Бәй, калага килеүемә генә йәш яҙыусыларҙың кәңәшмәһе асылырга тора икән.* С. Кулибай.

**2.** Кеше һүҙен хуплағанда әйтелә. *[Фәхри:] Ярай, ҡустым, әселәшеп йөрөмәйек, кисерешәйек бер-беребеҙҙе. [Ғамир:] Бәй, шулай итмәй ни, теге ни, булған, булған инде, кисерешергә кәрәк.* Б. Бикбай.

**БӘЙГЕ** *и.* **1.** Менге аттарҙың көс, һәләтен күрһәтер өсөн үткәрелгән ярыш. *Бәйге аты. Бәйгегә ат яратыу. Бәйге сабыу. Бәйге яһау.* ■ *[Әйләр хан менән Буләр хан] бер-береһе менән бик дуҫ йәшәгән, һунарга сыгып, кош атып, бәйге яһап, ат сабыштырып, батырҙарын көрәштереп, күңел асып көн иткән, ти* (Әкиәттән). **Кесе бәйге** йәш аттар сабышы (бәйгене башлағанда була). **Оло бәйге** һыналған оло аттар сабышы (йәш аттар сабышынан һуң була).

**2.** Шул ярыш башланған һәм бөткән майҙан. *Бәйгенән бер-ике сакырым китеп, кеше күҙенән югалгас ҡына, аттың йөрөшөн әкренәйттем.* Д. Юлтый. **Бәйге тегеү** бәйге тағылған ҡаҙыҡты ярыш майҙанына ҡаҙау. *Мәсем хан Ураҙ ханга күрше булган.. Йыл һайын бәйге тегеп, бәлүән һайлап, икәүе уйын уйнап ятыр булган.* «Бабсаҡ менән Күсәк».

**3.** Шул ярышта еңгән кеше йә атҡа бирелә торған бүләк. *Беренсе бәйге. Бәйге алыу.* ■ *Бикйән егетте күтәреп алып ергә ташлай. Шунан бәйге өләшеүсе Бикйәнгә бәйге бирә* (Әкиәттән). *Аттар саба бәйге алам тип, Ҡарасәс илай йәрһеҙ калам тип* (Халыҡ йырынан).

**БӘЙГЕЛЕК** *и.* Бәйгелә бүләк итеп биреү өсөн әҙерләнгән нәмә. *Бер йәйләүҙә бик өлкән бәйге йыйылган. Майҙан халыҡ менән ала-сыбар. Унда көрәш, һәр төрлө уйын-көлкө. Сапкын аттарга биреү өсөн эленгән бәйгелектәр елберләй* (Әкиәттән).

**БӘЙҒӘМБӘР** *и. диал.* Пәйғәмбәр.

**БӘЙҒӘТ** [*ғәр.*] *и. иҫк. кит.* Тоғро булырға бирелгән ант. *Бәйгәт биреү.*

**БӘЙЕЛ** [*ғәр.*] *и.* Ҡылыҡ, холоҡ.— *Ғүмере кыланмаганды, бәйелең аҙып йөрөһә! Әйҙә ҡайт!* — *тип ул [Миңзифа] ирен этә, төртә алып китте.* Һ. Дәүләтшина.

♦ **Аҡ бәйел(ле)** саф күңел(ле). *Солтанов иптәш шундай айырым хосусиәттәргә эйә булган тиндәшһеҙ аҡ бәйел юлбашсы бер эшсе ине.* Ш. Сатлыков. **Кесе бәйел(ле)** кеселек(ле), түбәнселек(ле); олоно оло тип белеүсән. *Кесе бәйелле кеше.* **Киң бәйел(ле)** кешегә ярҙамсыл, йомарт; киң күңел(ле). **Оло бәйел(ле)** 1) олоно оло тип хөрмәт итә белмәгән, үҙен ҙурға ҡуйыусан; 2) олпатлылыҡ.

● *Бәйел аҙмай, башҡа бәлә килмәй.* Мәҡәл.

**БӘЙЕЛҺЕҘ** *с.* Насар холоҡло, тотанаҡһыҙ. *Бәйелһеҙ булыу.* ■ — *Бынау араҡы мискәһе Нурислам агай аҙҙыра уны. Оло башы менән .. бәйелһеҙ.* Ф. Исәнғолов.

**БӘЙЕТ** [*ғәр.*] *и.* Ғибрәтле йә хәсрәтле бер

ваҡиғаға арналған шиғри хикәйәт. *Бәйет сығарыу. Бәйет әйтеү.* ■ *Был бәйетте мин яҙамын ҡанға мансып ҡәләмде* (Бәйеттән).

**БӘЙЕТСЕ** *и.* **1.** Бәйет сығарыусы.

**2.** Бәйет әйтеүсе.

**БӘЙЛЕ** *с.* **1.** Берәй нәмәгә осо төйөнләп беркетелгән. *Бәйле еп.* / Бау осона таҡылған, бауландырып таҡылған. *Бәйле күнәк.* // *Арҡан бәйле тора.*

**2.** Таралмаҫлыҡ итеп бау менән тарттырылған, сырмалған. *Бәйле йөк. Бәйле китап. Бәйле көлтә.* / Осо йәки ауыҙы бөрөп быуылған. *Бәйле тоҡ.* // *Нәмәләр бәйле ята.*

**3.** Өҫтөнән ҡаплап уралған. *Күҙе бәйле кеше.* / Бинт менән уралған. *Бәйле яра.*

**4.** Хәрәкәтләнә алмаҫлыҡ итеп сырмалған. *Бәйле кеше. Бәйле ҡул.* // *Бәйле ултырыу.*

**5.** Китеп бармаҫлыҡ итеп бау менән нимәгәләр беркетелгән (мал-тыуар, ҡош-ҡортҡа ҡарата). *Бәйле эт.*

**6.** *күсм.* Берәй нәмәгә, эш-хәлгә, һөҙөмтәгә ҡатнашы, йоғоносо булған. *[Сәғиҙә:] Оҙатырға пароходҡа төшһәм дә, ҡулыңды ҡыҫып ҡала алманым. Ул минең генә гәйебемдән булмағандыр йәшлек дыуамаллығына бәйле сәбәптәр арҡаһында килеп сыҡҡандыр.* М. Тажи. / Ҡатнашы, мөнәсәбәте булған. *Борон-борондан ил яҙмышына бәйле һәр оло ваҡиға халыҡ күңелендә йыр-моң булып ағылыр булған.* К. Мәргән.

◆ **Башы бәйле** *ҡар.* **баш. Бәйле ҡош һымаҡ** өйҙән сығыу, йөрөү иркенән мәхрүм кешегә әйтелә. *[Гөлзифа — Миләүшә хаҡында:] Бисара, һаман бәйле ҡош һымаҡ бала янында.* Б. Бикбай.

● *Бәйле һарыҡ ерендә утлар.* Мәҡәл. *Ир яҙмышы илгә бәйле.* Мәҡәл.

**БӘЙЛӘГЕС: ат бәйләгес** ат бәйләр өсөн ике бағана башына һайғау һалып яһаған ҡулайлама.

**БӘЙЛӘМ** [1] *и.* **1.** Ҡуша бәйләнгән бер төрлө нәмәләр йыйымы. *Аскыстар бәйләме. Ике бәйләм китап.* ■ *Гранаталар бәйләменә ҡушып, тыйып булмаҫ йөрәк тауышын [Билал] танк аҫтына ырғытты.* Х. Кәрим.

**2.** Бер бәйгә һыйырлыҡ ҡүләм. *Бер бәйләм селек. Ике бәйләм йүкә.* ■ *[Илбикә:] Өс-дүрт бәйләм киндер талҡыным йылҡысыға ҡулдәк тегергә.* Х. Ғәбитов.

**БӘЙЛӘМ** [2] *с.* Ҡымыҙға һауыла торған (бейәгә ҡарата). *Артелдә .. бәйләм бейәләр генә дүрт өйөр ине.* Н. Мусин.

**БӘЙЛӘМ** [3] *и.* **1.** Йөн йәки кизенән төрлө кейем бәйләү эше. *Бәйләм энәһе.*

**2.** Бәйләнелә торған нәмә (бейәләй, ойоҡ һ. б.). *Бәйләм бәйләү.* // *Бәйләм кейемдәр. Бәйләм шәл. Бәйләм ойоҡ.* ■ *[Ғәйникамал инәй] ҡулына бәйләмен алып, тәҙрә ҡаршыһына килеп ултырҙы. Ләкин бер-ике генә күҙ әйләнде лә эшен ситкә ҡуйҙы.* Я. Вәлиев.

**БӘЙЛӘМЕС** *и.* **1.** Мал бәйләй торған нәмә (ҡаҙыҡ һ. б.).

**2.** Ауыҙ, морондо йәки ауырыу күҙҙе ҡаплап бәйләй торған бәй. *Грипп менән ауырыған кеше янында бәйләмес бәйләп йөрөргә кәрәк.*

**3.** Әбейҙәр маңлайға яулыҡ эсенән бәйләй торған өс мөйөшлө бәләкәй яулыҡ.

**4.** *диал. ҡар.* **сәсмәү** 1.

**БӘЙЛӘМЕСЛӘҮ** *ҡ.* Бәйләмес (3 мәғ.) бәйләү. *Яулыҡты бәйләмесләп ябыныу.*

**БӘЙЛӘНЕҮ** *ҡ.* **1.** *төш. ҡар.* **бәйләү** [1]. *Бәйләнгән яра.*

**2.** Үҙ-ара яҡынлыҡта булыу, тоташыу. *Ул ваҡиғаның икеһе бер-береһенә бәйләнгән.* Д. Юлтый.

**3.** *күсм.* Нимәгә йәки ниндәйҙер шартҡа мөнәсәбәтле, ҡатнашлы булыу. *Һәр бер кешенең яҙмышы — ил яҙмышы, уның именлеге ил именлегенә бәйләнгән.* М. Кәрим. *Бөтә тормошобоҙ шул ергә бәйләнгән.* Т. Хәйбуллин.

**4.** *күсм.* Ниндәй ҙә булһа эш, шөғөлгә бирелеү; тотоноу. *Саҡай ауыл мәҙрәсәһен бөтөргәс, өйләнеп, хужалыҡ эштәренә бәйләнеп китте.* Б. Бикбай. / *һөйл.* Кем менәндер бәйләнешкә инеү. *Насар ҡыҙҙарға бәйләнһәң, булырһың әҙәм көлкөһө* (Халыҡ йырынан).

**5.** *күсм. һөйл.* Берәй талап, һорау менән йөҙәтеү. *[Йосоп:] Бәйләнделәр бит миңә әкиәт һөйлә тип. Мин .. баш тарттым.* С. Агиш. *Шул ваҡыт Күсәк батыр әйләнә, ти, һүҙ әйтеп, балаларға бәйләнә, ти.* «Бабсаҡ менән Күсәк»./ Йөҙәтеп, тынғыһыҙлап, кешегә таҡылыу. *Ҡыҙҙарға бәйләнеү.* ■ *Ул [ҡатын] миңә бәйләнә, минең менән шаяра, танауҙан ҡыҫа, биттән һыйпай.* Д. Юлтый. / Берәй сәбәп табып, бәлә һалып, кешегә йәбешеү. *Былар эрләшеп китә. Батша риза булмай. Көтөүсә оторо ныгыраҡ бәйләнә* (Әкиәттән).

◆ **Күҙ бәйләнеү** *ҡар.* **күҙ. Тел бәйләнеү** *ҡар.* **тел** 2. *[Ҡарлуғас:] Күп уйлауҙан иҫем, аҡылым бөттө, һүҙ әйтергә телем бәйләнде.* Б. Бикбай.

● *Ҡыҙлы өйгә ҡырҡ ат бәйләнер.* Мәҡәл.

**БӘЙЛӘНЕШ** *и.* **1.** Ниндәйҙер йәһәттән ике арала булған ҡатнашлыҡ. *Диалектик бәйләнеш.* ■ *Һис бер ваҡиғаға бәйләнеше булмаған был һорауға мин аптырап ҡалдым.* Д. Юлтый.

**2.** Хәбәр алышып тороу мөмкинлеге. *Хәл ҡатмарланды. Кәжән менән Юрғашты араһындағы бәйләнеш өҙөлдө. Унда ебәрелгән кешеләр ҙә әйләнеп ҡайтманы.* Я. Хамматов.

**3.** Үҙ-ара хәбәр алышып тороу сараһы; элемтә. *Телефон бәйләнеше. Яһалма спутник аша бәйләнеш.*

**4.** Эш, тормоштағы үҙ-ара ҡатнашлыҡ. *Дуҫлыҡ бәйләнеше. Экономик бәйләнеш. Ғаилә бәйләнеше. Бәйләнешкә инеү. Бәйләнеш тотоу. Бәйләнеште өҙөү.*

**5.** Төрлө матдәнең химик ҡушылдығы. *Көкөрт бәйләнештәре.*

**БӘЙЛӘНЕШЕҮ** *ҡ.* **1.** *урт. ҡар.* **бәйләнеү** 3—5.

**2.** Бәйләнеш булдырыу, бәйләнешкә инеү; аралашыу. *Курәһең, Аҡколаға үрелгән йүнһеҙ нәмә был өйҙө тышҡы донъя менән бәйләнешеү өсөн төйәк итеп кенә тота торғандыр.* Б. Бикбай.

**БӘЙЛӘНЕШЛЕ** *с.* Берәй нәмәгә, эш-хәлгә йәки һөҙөмтәгә ниндәйҙер йәһәттән ҡатнашлы; бәйле. *Бында ла [Троицкиҙа] бит исемле урындар, әҙәбиәт тарихына бәйләнешле ерҙәр күп.* К. Мәргән.

**БӘЙЛӘНЕШҺЕҘ** *с.* Мәғәнә йәһәтенән йәки башҡа яҡтан үҙ-ара яҡынлығы, ҡатнашы булмаған. *Бәйләнешһеҙ һүҙҙәр.*

**БӘЙЛӘНСЕК** *с.* Кешегә бәйләнеп йөҙәтеүсән. *Бәйләнсек кеше.* ■ *Иркә .. бәйләнсек егеттән ҡотолоуына ҡыуанып, уның [Аҡназаровтың] эргәһенә ташланды.* Ә. Вәли.

**БӘЙЛӘТЕҮ** *к. йөкм. ҡар.* **бәйләү** [1] 1—6. *Ирен ҡайһылай итеп кейендерергә белмәйенсә, Зәлифә бөтөрөлөп йөрөй. Ике тапҡыр ҡулдәгән алмаштыртты, өс мәртәбә галстук бәйләтте. Ҡара ҡуйы сәстәрен үҙе шымалап тарап ҡуйҙы.* «Ағиҙел», 1982, № 9.

**БӘЙЛӘҮ** [1] *к.* **1.** Бау йәки бау һымаҡ нәмәнең осон бергә ҡушып төйөнләү. *Сейәлдерепбәйләү. Элмәкләп бәйләү.* ■ *Эткол бауландырып бәйләп ҡуйған иңербауын тартып өҙҙө.* Т. Хәйбуллин. / Бауҙың осон берәй нәмәгә төйөнләп беркетеү. *Салып бәйләү. Тоҡанлап бәйләү.* ■ *Беҙ [бүре балаһын] кистәрен сыйырға бәйләп тота инек.* С. Кулибай. *Күрән атҡайымды бәйләп ҡуйҙым ҡул буйҡайҙарына тирәккә* (Халыҡ йырынан). *Буҙансы батыр арҡандың бер осон бағанаға бәйләп .. ер аҫтына төшөп киткән* (Әкиәттән). / Бауҙың осона берәй нәмә тағыу. *Былар [батырҙар] арҡандың осона таш бәйләп, ер тишегенә төшөрөп ҡараған* (Әкиәттән).

**2.** Бер нәмәне икенсе нәмәгә бау менән тартып ҡуша беркетеү. *Йөктө бәйләү.* ■ *Кемдер серек йүкә менән иҫке ҡапҡаны бәйләп ҡуйған. Фәриҙә бауҙы сисә башланы.* Р. Солтангәрәев. *Ҡолғаларға бәйләп йөн иләйем, әллә нишләп йөнөм ырамай* (Халыҡ йырынан). / Бер нәмәне икенсе нәмәгә бауландырып тағыу. *Билкәйемдә минең шул талдыра: ҡайыш баулы ҡылыс бәйләһәм* (Халыҡ йырынан).

**3.** Урап йәки осон осҡа төйнәп, өҫ-башҡа ҡулайлау (ҡайһы бер өҫ кейеменә ҡарата). *Алъяпҡыс бәйләү. Галстук бәйләү. Таҫтар бәйләү. Шарф бәйләү. Шәл бәйләү. Ботинканың бауын бәйләү.* ■ *Сәгиҙә башына яулыҡ бәйләне.* М. Тажи. / Таралмаҫлыҡ итеп бау менән тарттырыу. *Китаптарҙы бәйләү.* ■ *Һалдаттар ашығып-ашығып Варшаванан алған нәмәләрен бәйләй.* Д. Юлтый. / Осон йәки ауыҙын бөрөп, бау менән быуыу. *Тоҡто бәйләү.* ■ *Малайҙың кендеген ҡырҡып бәйләгәндәр ҙә атаһының сәкмәненә урап, ҡыуышҡа индереп һалғандар* (Әкиәттән). / Өҫтөнән ҡаплап урау. *Ауыҙҙы бәйләү. Күҙҙе бәйләү.* ■ *Бинт пакетын асып, һыңар ҡул менән йәрәхәтте арлы-бирле генә бәйләнем.* Д. Юлтый.

**4.** Бау менән тарттырып эҙерләү, эҙер нтеү. *Һал бәйләү. Миндек бәйләү.* ■ *Һабыр менән Иҫәнгилде йүгерә-атлай йөрөп, көлтә бәйләй.* Ғ. Дәүләтшин.

**5.** Билдән уратып тарттырыу; быуыу. *[Түләбай ағайҙың] өҫтөндә аҡ сәкмән, [уны ул] нәҙек кенә ҡыҙыл билғау менән ҡаушырып бәйләгән.* Ғ. Ибраһим-Ҡыпсаҡ.

**6.** Ҡуҙғала алмаҫлыҡ итеп ҡыҫып сырмау. *Аяғын бәйләү. Ҡулын бәйләү.* ■ *Һине бәйләп тотҡан нык бығауҙы бик тиҙ генә өҙә алмаҫһың.* Ш. Бабич.

**7.** Йөндән, ептән махсус энә йәки башҡа нәмә менән үреп төрлө кейем, төрлө нәмә эшләү. *Ау бәйләү. Бейәләй бәйләү. Бирсәткә бәйләү. Селтәр бәйләү. Шәл бәйләү.* ■ *Гөләйшә инәйем уның [Мөхиттең] муйынына шарф та бәйләп өлгөрттө.* К. Кинйәбулатова.

**8.** *күсм.* Нимәгә йәки ҡайҙалыр айырылмаҫлыҡ итеп беркетеү. *Яҙмыш уны [Сәгиҙәне] Ҡарамалы ауылына мәңгегә бәйләп ҡалдырҙы.* М. Тажи. *Бәйләнең һин минең хистәремде, китеп булмай һинең янындан.* М. Хәй.

**9.** *күсм.* Бер тәртипкә, мәғәнәгә килтереп ялғау, теҙеү. *Ул ашыҡты, һүҙҙәрен бәйләмәй һөйләргә кереште.* С. Агиш.

**10.** *күсм.* Ниндәйҙер йәһәттән ике араны ҡатнаштырыу. *Уҡытыусылар уҡытыу эшен колхоз эшенә бәйләп алып бара.* / Мөнәсәбәте, ҡатнашы бар тип күрһәтеү. *Кешегә бәйләп һөйләү.* / Эш-хәлде, берәй һөҙөмтәне ниндәйҙер сәбәпкә ҡайтарыу. *Төҙөлөш эшенең артҡа ҡалыуын билдәле ҡыйынлыҡтарға бәйләү.*

◆ **Бейә бәйләү** *ҡар.* **бейә. Бәйләгән кәүек артта ҡалдырыу** бик тиҙ артта ҡалдырыу. *Поездың йөрөшө рәхимһеҙ бит. Бер нисә минут эсендә йәйәүлеләрҙе бәйләгән кәүек артта ҡалдырып китте.* Д. Юлтый. **Күҙ бәйләү** *шул уҡ* **күҙ быуыу** (*ҡар.* **күҙ**). **Күңел бәйләү** *ҡар.* **күңел.** *Уралды ул [Һомай] күргәс тә, батырлығын белгәс тә, яҡшылығын һиҙгәс тә, Уралға күңел бәйләгән, ул Уралды һайлаған.* «Урал батыр». **Өмөт бәйләү** *ҡар.* **өмөт** 1. **Сәсен бәйләү** *ҡар.* **сәс** [1]. **Сәсте** (*йәки* **сәсте сәскә**) **бәйләү** *ҡар.* **сәс** [1].

● *Юҡлыҡ йомарт ирҙең ҡулын бәйләгән.* Мәҡәл.

**БӘЙЛӘҮ** [2] *и.* Бәйләй торған урын. *Бәйләүгә ҡуйыу.* ■ *Бәйләүҙә аттарҙың булмауына ҡарағанда, ҡунаҡтар күптән килгән булырға тейеш.* Н. Иҙелбай.

**БӘЙЛӘҮЕС** [1] *и. лингв.* Исем, алмаш, һандан булған бер һүҙҙең икенсе һүҙгә булған мөнәсәбәтен күрһәтә торған ярҙамсы һүҙ (*мәҫ.* өсөн, менән, тиклем һ. б.).

**БӘЙЛӘҮЕС** [2] *и. ҡар.* **һеңер.**

**БӘЙЛӘҮЛЕ** *с. ҡар.* **бәйле.**

**БӘЙЛӘШЕҮ** *к.* **1.** *урт. ҡар.* **бәйләү** [1] 1, 2, 4—7. **2.** *ярҙамл. ҡар.* **бәйләү** [1] 2—4, 7.

**БӘЙНӘ-БӘЙНӘ** [*ғәр.*] *р.* Бик ентекләп, бер нәмәһен дә ҡалдырмай теҙеп (һөйләү).— *Башлағас, һөйләйем инде,— тип, [Зөлхизә апай] .. бәйнә-бәйнә тормошон һөйләп бирҙе.* М. Бикти-мерова.

**БӘЙНӘЛМИЛӘЛ** [*ғәр.*] *иҫк.* **1.** *и. ҡар.* **интернационал.** *Һәр урында яңғырай «Бәйнәлмиләл» — берлек йыры.* Д. Юлтый.

**2.** *с. ҡар.* **халыҡ-ара.** *Бәйнәлмиләл буржуазия.*

**БӘЙНӘТ** [*ҡаҙ.* < *ғәр.*] *и. диал.* Ыҙа, имгәк, мәшәҡәт.— *Күҙгә ҡан һауып, аҡлап китте. Торабара тома һуҡыр булдым. Башыма бер бәйнәт кенә булды бит.* Ҡ. Аралбаев.

● *Бәйнәт, бәйнәт — төбө зиннәт.* Мәҡәл.

**БӘЙТУЛЛА** [*ғәр.*] *и. иҫк. кит.* **1.** Дини ҡарашса, алланың өйө; ҡәғбә.

**2.** (*баш хәреф менән*) Ир-ат исеме.

**БӘЙҺЕҘ** *с.* **1.** Бау, арҡан менән ҡуша нығытылмаған. *Бәйһеҙ ҡапҡа. // Йөк бәйһеҙ ултыра.*

**2.** Тарттырып бәйләнмәгән. *Бәйһеҙ көлтә.* / Осо йәки ауыҙы бөрөп быуылмаған. *Бәйһеҙ тоҡ. // Тоҡ бәйһеҙ ята.*

**3.** Өҫтөнән ҡаплап уралмаған. *Күҙе бәйһеҙ. Бәйһеҙ яра.*

**4.** Сырмап бәйләнмәгән. *Бәйһеҙ ҡул.*

**5.** Бау менән беркетелмәгән. *Бәйһеҙ ат. // Эт бәйһеҙ йөрөй.*

**6.** *күсм.* Әҙәп, тәртиптә йәки эш, ҡылыҡта сикте, саманы белмәгән. *Бәйһеҙ кеше.* ■ *[Һөнәрсенең] уйсан күҙҙәрендә ҡанатлы дәрт, бәйһеҙ сәм түгел, ә тәрән моң, әйтелмәгән зар ята.* З. Биишева.

**БӘЙҺЕҘЛӘНЕҮ** *к.* Әҙәп, тәртиптә саманан, сиктән сығыу; шашыу. *Бәйһеҙләнеп китеү.*

**БӘЙӘ** *и. кар.* **хаҡ** [3].

**БӘЙӘЛЕ** *с. кар.* **хаҡлы** [3].

**БӘК** *и. иҫк. кар.* **бей.**

**БӘКЕ** *и.* Япмалы бәләкәй бысаҡ. *Ике йәпле бәке. Сәс бәкеһе.* ■ *Батрак Ивандың башын салғы бәке менән ҡаната-ҡаната ҡырып, таҡыя кейҙерҙеләр.* Ғ. Минһажев. *Туғанов .. һәр ваҡыт кеҫәһендә йөрөтә торған әллә нисә асмалы бәкеһе менән консерваны асырға тотонդо.* Ә. Вәли. **Еҙнә бәкеһе** *этн.* еҙнә кеше ҡәйнештәренә биргән бәке.

**БӘКЕР** [*ғәр.*] *и.* Боҙолмаған ҡыҙ сифаты; ҡыҙлыҡ.

● *Ҡыҙҙың бәкере кемгә китһә, фекере шунда булыр.* Мәҡәл.

**БӘКЕС** [1] *с.* **1.** Осо саманан артыҡ эскә тартып һапланған (салғы йәки ураҡ); *киреһе* һоноҡ. *// Бәкес һаплау.*

**2.** Ике осо ныҡ эскә йомолған (айға ҡарата); *киреһе* яҙыҡ. *Бәкес ай.* ■ *Ай тыуғанда бәкес булһа, яуынға була.*

**БӘКЕС** [2] *и. диал.* Әтмәкәй.

**БӘКТӘРГӘЙ** *и. диал.* Мүктәрге.

**БӘКӘЙ** *и. диал.* Бәкәл.

**БӘКӘЛ** *и.* Аяҡтың енсек түбәнендәге сурайып торған быуын һөйәге. *Бәкәл быуыны.* ■ *Яраһы артыҡ ҡаты түгел, пуля уң аяғының бәкәленә тейгән.* Ш. Насыров. *Ҡаһым түрә менгән һоր юрғаның бәкәлдәре генә аҡ ине* (Халыҡ йырынан).

♦ **[Ҡаҡ] бәкәлгә һуғыу** берәй эште башҡарыу мөмкинлегенән яҙҙырыу, сараһыҙ итеү. *Төҙөлөш материалдарының юклығы бәкәлгә һуға.* **Бәкәле шыйыҡ** *диал.* быуыны йомшаҡ (*кар.* **быуын** [1]).

**БӘКӘЛСӘЙ** *и.* **1.** Малдың бәкәл быуынындағы ваҡ-ваҡ тупар һөйәк; ашыҡ. *Бәкәлсәй һөйәге.*

**2.** Шул һөйәктәр менән уйнай торған уйын исеме (арҡыры һыҙыҡҡа теҙеп ултыртылған бәкәлсәйҙәргә ситтәге бер билдәнән тороп, һуҡҡыс менән бәрәләр; йығылғанын кеше үҙенә ала; теймәй аша барып төшһә, кирегә әйләнеп, тағы бәрәләр; был юлы кемдеке яҡыныраҡ төшкән, шул башлап бәрә; һуҡҡысҡа ҡурғашлап һаған шул уҡ бәкәлсәйҙе ҡулланғанда, йығылған бәкәлсәйҙе һуҡҡысы йөҙ түбән, йәғни «бүк», булып төшкән кеше генә ала, салҡан, йәғни «сик», булып төшһә, алмай кире ултырта). *Өй артында ауыл малайҙары бәкәлсәй уйнай.* А. Таһиров.

**БӘКӘС** *с. бал.* Бәләкәс.

**БӘҠИА** [*ғәр.*] *и. иҫк. кит.* Ҡалған нәмә; ҡалдыҡ. *Ҡағыҙ-ҡара етмәҫ, яҙһам хәлегеҙҙе, тетрәтер таштан ҡаты күңелегеҙҙе, фекер итеп ҡағыҙ бер эшегеҙҙе, бәкиаһы тарихтарҙа яҙылыр инде* (Бәйеттән).

**БӘЛДӘ** [*ғәр.*] *и. иҫк.* Ҡала. *Бәлдәи Өфө.*

**БӘЛДӘҮ** *к. иҫк.* Көс менән бәреү; елгәреү. *Ҡуҙы яурын корос башаҡ, бәлдәгәндә тайшанып ҡырын китһәң, һиңә хурлыҡ* (Ҡобайырҙан).

**БӘЛЕ** *и. иҫк.* **1.** Нимәгәләр торош иткән, ҡиммәтен ҡайтарырлыҡ булған күләм. *[Эткол:] Һин уларҙы ашат, эсер, шуның бәленә улар эшләмәһен дәме әллә?* Ғ. Дәүләтшин.

**2.** *с. мәғ.* Хаҡы, ҡиммәте һ. б. яғынан нимәгәләр тиң; торошло. *Эте һарыҡҡа бәле.* М. Ҡулаев.

**БӘЛЕШ** [1] *и.* **1.** Таба йәки тимергә йәйелгән ҡамыр эсенә ни ҙә булһа һалып, ҡамыр менән өҫтөн ҡаплап бешергән ашамлыҡ. *Ваҡ бәлеш. Балан бәлеше. Ит бәлеше. Ҡабаҡ бәлеше. Бәлеш ҡапҡасы. Бәлеш төбө. Бәлеш тышы.* ■ *Сәлимә мейестән әле генә сыҡҡан бәлеште табаһы менән күтәреп килтерҙе.* С. Агиш.

**2.** *с. мәғ. күсм.* Булдыҡһыҙ, йомшаҡ. *[Аллабирҙе — Арыҫланға:] Милиция кешегә улай бәлеш булырға ярамай, туған.* Ш. Биҡкол.

♦ **Бәлеш ауыҙ** *кар.* **ауыҙ.**

**БӘЛЕШ** [2] *ымл.* Ҡапыл аптырағанда әйтелә. *[Барый:] Беләһеңме, Самат Кәлиевич кем ул? Директор! [Гөлзада:] Бәлеш!* Ш. Насыров.

**БӘЛЕШЛӘНЕҮ** *к. кар.* **бәлшәйеү 1.** *Ирене бәлешләнгән.*

**БӘЛЖЕРӘҮ** *к. диал.* Бәлйерәү.

**БӘЛЗӘМ** [*рус.* бальзам ⟨ *гр.*] *и.* **1.** Ҡайһы бер үҫемлектәрҙең ыҫмалаһы һәм эфир майы булған хуш еҫле ҡуйы һуты (айырым төрҙәре техникала, медицинала ҡулланыла).

**2.** Дарыу үләненән яһалған төнәтмә.

**БӘЛЗӘМЛӘНЕҮ** *к. төш. кар.* **бәлзәмләү.**

**БӘЛЗӘМЛӘТЕҮ** *к. йөкм. кар.* **бәлзәмләү.**

**БӘЛЗӘМЛӘҮ** *к.* Боҙолоуҙан, сереүҙән һаҡлай торған матдә һөртөп һеңдереү. *Мәйетте бәлзәмләү.*

**БӘЛИ** [*фарс.*] *киҫ. иҫк.* Эйе, шулай. *[Батыр:] Мөхәррир эфәнде, шәйт ки һеҙ ҙә шул эш менәндер. [Кулак:] Бәли, эфәндем.* З. Бәшири.

**БӘЛИҒ** *с. кар.* **балиғ.**

**БӘЛЙЕРӘТЕҮ** *к.* Хәлһеҙләндереп, ҡарыуһыҙландырып ҡаҡшатыу. *Эҫелек уны бәлйерәтте.*

**БӘЛЙЕРӘҮ** *к.* **1.** Хәлһеҙләнеп, ҡарыуһыҙланып, ҡаҡшап ҡалыу. *Ҡартлыҡтан бәлйерәгән бер айыу һыйыр-фәлән ауларға .. ҡулынан килмәй башлағас, тауыҡ үрсетеп көн күрмәксе булған* (Әкиәттән).

**2.** *күсм.* Булдыҡһыҙланыу, ебеү. *[Шәрәф:] Ҡара, малай, бик шәп ҡыҙ ул, Сания. Бәлйерәп йөрөһәң, ҡолаҡ ҡағырһың.* Н. Мусин.

**БӘЛЙЕРӘШЕҮ** *к. урт. кар.* **бәлйерәү** 1. *Бәлйерәшеп ултырыу.*

**БӘЛЙЕҮ** *к. кар.* **бәлйерәү.**

**БӘЛЙӘ** *и.* Кәкре йөҙлө бағау.

**БӘЛК** *окш.* Ниҙеңдер тоталҡаһыҙ булып ҡапыл төшөүен белдергән һүҙ. *Бәлк итеү.* ■ *[Йоҡас карттың] башы, быуынһыҙ нәмә кеүек, бәлк итеп төшөп китте.* Ғ. Дәүләтшин.

**БӘЛК-БӘЛК** *окш.* Ҡабат-кабат бәлк иткәнде белдергән һүҙ. *Бәлк-бәлк итеү. Бәлк-бәлк килеү.*

**БӘЛКЕЛДӘТЕҮ** *к.* Бәлк-бәлк иттереү, бәлк-бәлк килтереү. *Йоҡомһорап арбала башты бәлкелдәтеп барыу.*

**БӘЛКЕЛДӘҮ** *к.* Бәлк-бәлк итеү, бәлк-бәлк килтереү. *Бәлкелдеге сығыу.* ■ *Зәһәр араҡы еле кағылған бер үҫмер колхоз идараһына аяҡтары бәлкелдәп килеп ин[де].* Й. Солтанов.

**БӘЛКЕМ** *терк. диал.* Бәлки.

**БӘЛКИ** [*ғәр.*] **1.** *кире терк.* Баш һөйләмгә ҡаршы ҡуйылған эйәрсен һөйләмде теркәй. *Ел туктамай, бәлки көсәйә генә бара.* / Ҡара-ҡаршы ҡуйылып, баш һөйләмгә асыҡлыҡ йәки өҫтәмә индергән эйәрсен һөйләмде теркәй. *Башҡортостан эшләп сығарған нәмәләрҙе Советтар Союзында ғына түгел, бәлки сит илдәрҙә лә яҡшы беләләр.* «Совет Башҡортостаны», 1985, 4 ноябрь.

**2.** *инш.* Уй, фараздың бик үк ышаныс менән әйтелмәгәнен белдерә. *Көтәйем тинем. Алда, бәлки, ҡыҙығыраҡтары булыр.* С. Агиш. *Ҡайғырма ла, дуҫҡай, ай ҡайғырма, бәлки, рәхәт көндәр күрерһең* (Халыҡ йырынан). / Кәңәш, өндәүҙең бик үк ҡәтғи әйтелмәгәнен белдерә. *Һөнәрһеҙ ҡыйын бит, бәлки, берәй ергә уҡырға инерһең, ә?* / Һорауҙы йомшартыу өсөн ҡулланыла. *Бәлки, һинең ҡайтҡың килер?*

**БӘЛЛЕҮ** *и. диал. кар.* **сәңгелдәк** 1.

**БӘЛЛИ-БӘҮ** *ымл.* Сабый баланы көйләп йоҡлатҡанда әйтелә; әүәй. *Йоҡла, бәгрем, йом күҙеңде, әлли-бәлли, бәлли-бәү.* М. Харис.

**БӘЛЛӘҮЕР** [*ғәр.*] *и. иҫк.* Үҙенә бер төрлө итеп эшләнгән юғары сифатлы саф быяла; хрусталь.

♦ **Бәлләүер таш** ҡырлы-ҡырлы булып кристаллашҡан үтә күренмәле тау тоҡомо; йылтырған.

**БӘЛМӘН** *и. диал.* **билмән.**

**БӘЛТЕРӘҮ** *к. диал. кар.* **бәлйерәү** 1.

**БӘЛҮӘН** *и. һөйл.* Бәһлеүән.

**БӘЛШӘЙЕҮ** *к.* **1.** Үҙ рәүешен юғалтып, йәйелеп китеү; йәмшәйеү. *Ауыҙы бәлшәйгән. Бәлшәйеп төшкән.*

**2.** *күсм. мыҫҡ.* Иларға итеп ауыҙҙы боҙоу. *Бер һүҙ әйтер хәл юҡ, бәлшәйеп бара.*

**БӘЛШӘЙТЕҮ** *к.* Рәүешен боҙоп, йәйеү. *Иренде бәлшәйтеү.* ■ *Һылыу ҡортҡа .. ауыҙын бәлшәйтеп, иламһырап ҡуйғандай булды.* Т. Йәнәби.

**БӘЛӘ** [*ғәр.*] *и.* **1.** Тормош именлеген боҙған ауыр, ҡайғылы хәл-ваҡиға. *Бәләгә осрау (тарыу, эләгеү). Башҡа бәлә алыу. Башҡа бәлә төшөү. Бәләнән ҡотолоу. Бәлә килтереү.* ■ *[Булат:] Әсәйем әйтә, был интегеүҙәр һуғыш бәләһе.. ти.* К. Кинйәбулатова. *Тик торғанда бер бәләһе булыр, тип Әтәскол ҡурҡҡан да, Төлкөгә Тауыкты биргән дә ебәргән, ти* (Әкиәттән). / Йән көйҙөрөрлөк, мәшәҡәт килтерерлек эш-хәл. *Бәлә сығарыу.* ■ *[Әбей — ҡыҙҙарына:] Ах, һеҙ, өйөрлө хәсрәт. Башыма бәлә булдығыҙ бит* (Әкиәттән).

**2.** Именлек, тыныслыҡты боҙған ығы-зығы, шау-шыу. *Бәлә ҡуптарыу.*

**3.** Кемгәлер тағылған ғәйеп. *Нахаҡ бәлә. Бәлә ягыу.* ■ *Ҡыҙылтеш .. бөтә бәләне бүтәндәргә ауҙарып, үҙен аҡларға маташты.* Ә. Бикчәнтәев.

♦ **Аяҡлы бәлә** йыш ҡына ҡыйынлыҡ, мәшәҡәт килтергән, имгәк кешегә ҡарата әйтелә. **Бына бәлә** берәй ҡыйын хәлгә төшкәндә әйтелә. *[Саҡай:] Бына бәлә! Ике йөҙ бот иген етешмәй бит.* Б. Бикбай. **Бәлә ҡамыты** мәшәҡәт, ҡыйынлыҡ килтергән эш йәки берәй кеше. **Бәләнән баш-аяҡ** *кар.* **баш-аяҡ. Бәлә һалыу** юҡты-барҙы бәлә итеп, оло тауыш күтәреү. **Мең** (*йәки* **ҡырҡ) бәлә менән** бик ҙур ҡыйынлыҡ менән. *Мең бәлә менән Лапашты заводына барып еттек.* М. Ғафури. **Эт бәләһе менән** *кар.* **эт.**

● *Бәлә аяҡ аҫтында* Әйтем.

**БӘЛӘД** [*ғәр.*] *и. иҫк.* Ҡала.

**БӘЛӘК**[1] [*рус.*] *и.* Кер туҡмағы.

**БӘЛӘК**[2] *и. диал.* Тараҡан.

**БӘЛӘКӘЙ**[1] *с.* **1.** Дәүмәле, күләме яғынан ҙур булмаған; бәләкәс; *кireһе* ҙур. *Бәләкәй ағаслыҡ. Бәләкәй булмә. Бәләкәй йылға. Бәләкәй китап. // Бәләкәй итеп яһау.* / Буйға, кәүҙәгә ҙур булмаған. *Бәләкәй кәүҙәле кеше.* / Һан яғынан ҙур булмаған; әҙ. *Бәләкәй төркөм.* ■ *Фатир яҡшы, таҙа, ғаиләһе бәләкәй, ике генә ҡыҙы бар.* Д. Юлтый.

**2.** Оҙонлоҡ яғынан ҙур булмаған; ҡыҫҡа. *Бәләкәй аҙым.*

**3.** Йәш яғынан ҙур булмаған, кесе йәштәге. *Бәләкәй малай. Бәләкәй ҡыҙ. Йәшкә бәләкәй. Бәләкәй булыу. // Бәләкәйҙән эшкә өйрәнеү.* ■ *Ике бәләкәй бала кискә тиклем илап, ҡараңғы төшкәс кенә, йоҡлап китте.* Һ. Дәүләтшина. *Йүгереп йөрөгән бәләкәй малайҙар тубыҡҡаса ҡулдәк кейгәндәр.* Ғ. Амантай.

**4.** Йәш яғынан икенсе берәүгә ҡарағанда кесе. *Бәләкәй ҡайнаға.*

**5.** *күсм.* Еңел генә башҡарырға мөмкин булған; анһат. *Эш бик бәләкәй нәмәлә ҡалды: ятакханаға ҡайтырға ла институт нәмәләрен тапшырып, станцияға төшөргә.* С. Агиш.

**6.** *күсм.* Әһәмиәте яғынан ҙур булмаған. *Бәләкәй төҙәтмә.* ■ *[Сәғиҙә:] Бәләкәйме, ҙурмы, һәр яңылыҡтың башлангысын тоя белергә кәрәк.* М. Тажи. *Колхоз мәсьәләһе — бәләкәй нәмә түгел.* Б. Бикбай. / Ҡиммәте яғынан ҙур булмаған. *Бәләкәй аҡса.*

**7.** *күсм.* Урыны, дәрәжәһе яғынан ҙур булмаған. *Дөрөҫ, беҙ бәләкәй кешеләр. Тәү ҡараштa ябай ғына, күҙгә ташланмай торған ғына кешеләрбеҙ. Әммә ышанысыбыҙ көслө.* «Ағиҙел», 1970, № 5. *Таҙ .. бәләкәйерәк һанатты сакырттты ла: «Хәҙер үк минең атайым менән әсәйемде .. алып кил!» — тип бойорҙо, ти* (Әкиәттән).

**8.** *р. мәғ.* Бер ни тиклем, әҙ генә.— *Бәләкәй ҡуҙғалыбыраҡ, кеше төҫлө, аяҡты ҡапылыраҡ алып атлаһаңсы.* Т. Хәйбуллин.

● *Олоһо күрмәй, бәләкәйе белмәй.* Әйтем.

**БӘЛӘКӘЙ**[2] *и. һөйл.* 250 грамм араҡы һыйышлы шешә; сәкүшкә. *[Тәминдәр] бер бәләкәйҙең етеп килгән башына.* Ә. Вәли.

**БӘЛӘКӘЙЛӘНЕҮ** *ҡ.* Бәләкәйгә[1] (1, 2 мәғ.) әйләнеү; бәләкәсәйеү. *Зәбирә еңгә Хәмиткә ҡарағанда ныҡыраҡ ҡартайған.. Кәүҙәһе лә бәләкәйләнә төшкән.* С. Агиш.

**БӘЛӘКӘЙЛӘТЕҮ** *ҡ.* Бәләкәйгә[1] әйләндереү, бәләкәй[1] итеү; бәләкәсәйтеү. *Гәрәй ҡулаҡ өйөнөң икенсе яғын бүлдереп, икмәк мейесен бәләкәйләтеп сығарып, ҡыҙыл мөйөш яһатып ебәрергә кәрәк.* Б. Бикбай. *Бал ҡорто ғаиләләренең ояларын бөтә кәрәҙҙәр ҙә ҡорт менән тулғанға тиклем бәләкәйләтәләр.* З. Байбурин.

**БӘЛӘКӘЙЛӘҮ** *ҡ. диал.* Бәләкәсәйтеү.

**БӘЛӘКӘС** *с.* **1.** Дәүмәле, күләме яғынан ҙур булмаған; бәләкәй; *киреһе* ҙур. *Бәләкәс өй. Бәләкәс ишек. // Бәләкәс итеп ҡырҡыу.* / Кәүҙәһе, буй-һыны ҙур булмаған; бәләкәй. *Бәләкәс кенә кеше.* ■ *Ғәйни ағай менән Хәсби апай, бәләкәс кенә туры бейәне еғеп, баҫыу юлы менән .. йүнәлде.* Т. Йәнәби. *Бәләкәс кенә аҡ ҡуян, ҡолағында ҡараһа* (Халыҡ йырынан). / Һан яғынан ҙур булмаған; әҙ. *Бәләкәс кенә мәжлес.*

**2.** Оҙонлоҡ яғынан ҙур түгел; ҡыҫҡа. *Бәләкәс кенә таяҡ.*

**3.** Йәш яғынан ҙур булмаған; кесе йәштәге. *Бәләкәс бала. // Бәләкәстән йомошҡа йөрөү.* ■ *[Мәғфүрә] ҡырға сыҡҡанда Диләһен дә алып сыға, бәләкәс булһа ла иптәш бит әле, тип уйлай.* Һ. Дәүләтшина.

**4.** Йәш яғынан икенсе берәүгә ҡарағанда кесе; бәләкәй. *Бәләкәс апай.* ■ *[Зәбирә:] Бәләкәс ҡыҙым быйыл уңынсыны бөтөрә.* С. Агиш.

**5.** *күсм.* Еңел генә башҡарырға мөмкин булған; анһат. *Бәләкәс эш. Кешегә кәңәш биреү бәләкәс нәмә түгел.*

**6.** *күсм.* Әһәмиәте ҙур булмаған. *Бәләкәс мәсьәлә.* ■ *Икһеҙ-сикһеҙ оло диңгеҙгә нимә етмәй? Ниңә ул Юламан ҡарттың бәләкәс кенә бәхетен дә күпһенде?!* З. Биишева.

**7.** *күсм.* Урыны, дәрәжәһе яғынан ҙур булмаған. *Бәләкәс кеше.*

**8.** *р. мәғ.* Бер ни тиклем, әҙ генә. *Һеҙҙән килгән елгә битем ҡуям һағыныуҙарым бәләкәс баҫһын тип* (Халыҡ йырынан).

● *Аяғы ҙур һыйғанын кейер, аяғы бәләкәс һөйгәнен кейер.* Мәҡәл.

**БӘЛӘКӘСӘЙЕҮ** *ҡ.* Бәләкәскә (1, 2 мәғ.) әйләнеү. *Быйма аяҡҡа һыймай, бәләкәсәйгән.*

**БӘЛӘКӘСӘЙТЕҮ** *ҡ.* Бәләкәскә (1, 2 мәғ.) әйләндереү; бәләкәс итеү. *Булмәнә бәләкәсәйтеү.*

**БӘЛӘ-ҠАЗА** *и. йыйн.* Тормош иминлеген боҙған, мал-мөлкәткә, һаулыҡ-сәләмәтлеккә зыян килтергән ауыр хәл-ваҡиға. *Бәлә-ҡазаға тарыу.*

**БӘЛӘЛЕ** *с.* Аҙап, мәшәҡәт килтерә торған. *Биш балаға торорлоҡ бәләле ҡыҙ Әнисә.* К. Кинйәбулатова.

**БӘЛӘЛӘНЕҮ** *ҡ.* Юҡ-барҙы бәлә итеп, ғауғалау; бәлә һалыу. *Бушҡа бәләләнеп йөрөү.*

**БӘЛӘН** *киҫ. һөйл.* Фәлән.

**БӘЛӘНД** [*фарс.*] *с. иҫк. кит.* **1.** Бейек, юғары. *Бәлә́нд бина.*

**2.** Бөйөк, оло. *Күп ине мосолманға назарығыҙ, көн һайын бәләнд майҙан баҙарығыҙ.* Аҡмулла.

**БӘЛӘСЕЛ** *с.* Юҡ-барҙы бәлә итеп, оло тауыш ҡуптарыусан. *[Гөлшат — бәрәскә:] Әй, һин бәләсел! Ниңә баҡыраһың? Һине юрый йәшерергә тырышам, ә һин тауыш бирәһең.* С. Мифтахов.

**БӘЛӘСНИК** *с. диал.* Бәләсел.

**БӘЛӘСӘЙ** *и. иҫк. һөйл.* Полицей. *[Ирҙәр] әйтер булһа хаҡ һүҙ һәм асыуҙы байҙарға, һаҡта әҙер торған бәләсәйҙәр ҡылыс, ҡамсы менән яйларға.* С. Кулибай.

**БӘЛӘҮ** *ҡ. иҫк.* **1.** Хаҡы, ҡиммәте яғынан сағыштырып, тиңәү, тиң ҡуйыу. *Бер йомғаҡ майға бәләп, бер күнәк картуф бирҙем.*

**2.** Биләп ҡуйғанды күрһәтеп, билдә һалыу. *Сабынлыҡты бәләп ҡуйыу.*

**БӘЛӘҮЛЕ** *с. иҫк.* Билдә ҡуйып, бәләп, алдан биләп ҡуйылған. *Бәләүле ер.*

**БӘЛӘХӘТЛӘҮ** *ҡ. диал.* Яфалау. *Кейәү һәйбәт, яман һүҙе юҡ, бәләхәтләмәй.*

**БӘН** *зат. а. иҫк. кит.* Мин.

**БӘНДӘ** [*фарс.*] *и.* **1.** Ҡол. *Ғүмер үтте булып бәндәгә бәндә.* М. Ғафури. *[Батша:] Һин ниндәй бәндә? [Бай:] Мин, батшам, бәндә түгел, бөтә илгә билдәле фәлән бай булам* (Әкиәттән).

**2.** (*йәки* **алла бәндәһе**) Алла ҡоло, кеше. *Изге бәндә.* ■ *[Рәхимә:] Аллаһы тәғәлә үҙенең иң яратҡан бәндәһенә хәсрәт ебәрермен тигән.* Һ. Дәүләтшина.

**3.** *кәмһ.* Кеше. *Алйот бәндә. Рәхимһеҙ бәндә. Яуыз бәндә.*

◆ **Мин бәндәгеҙ** түбәнселек менән һөйләгәндә «мин» тиәһе урында әйтелә. *Мин бәндәгеҙ һеҙгә ҡулдан килгәнсә ярҙам күрһәтергә әҙер.*

● *Ҡайғыһыҙ бәндә ҡара һыуға һимерә.* Әйтем.

**БӘНИ** *и. ҡар.* **бине.**

◆ **Бәни инсан** (*йәки* **әҙәм**) әҙәмдәр. *Был булыр иң ахырғы, иң ҡаты ҙур жиһат. Булыр һәм бәйнәлмиләл бәни инсан азат* (Халыҡ йырынан). **Бәни исраил** йәһүдтәр.

**БӘП-** *киҫ.* Бә- ижеге менән башланған төп сифат һәм рәүешкә ҡушылып, артыҡлыҡ дәрәжәһе бирә. *Бәп-бәләкәй. Бәп-бәкес.*

**БӘПЕЛДӘТЕҮ** *ҡ.* **1.** Ҡул менән ҡағып, көйләп йоҡлатыу (баланы). *Кем бәпелдәтте бәпесте, кем уйнатты көн буйы.* С. Ҡудаш.

**2.** Ҡурҡҡан баланың йөрәген ултыртыу өсөн арҡаһын, күкрәген ҡул менән ҡаҡҡылап имләү.

**БӘПЕМБӘ** *и.* **1.** Ҡатмарлы сәскәләләр ғаиләһенә ҡараған ҡыуыш һабаҡлы, һары сыҡ сәскәле, туҙғаҡ орлоҡло ваҡ үлән үҫемлек. *Сайҡалыша юл ситендә туҙғаҡ башлы бәпембәләр.* Р. Бикбаев.

**2.** *диал. ҡар.* **ҡаҙаяҡ**[1] 1.

**БӘПЕС** *и.* Сабый бала; бәпәй. *Һәтес-һәтес-һәтес тә, бигерәк матур бәпес тә! Кем ҡарамаҫ, кем һоҡланмаҫ быңдай матур бәпескә!* Ғ. Амантай.

◆ **Бәпес бармаҡ** *диал.* сыңғарсай.

**БӘПЕСЛӘҮ** *к.* Бала табыу.— *Ҡал, Ғариф, әсәң бәпесләргә йөрөй, йомоштарына барғыларһың,— тине Камил.* Р. Ниғмәти.

**БӘПКӘ** [1] *и.* **1.** Ҡаҙ, өйрәк себеше. *Ҡаҙ бәпкәһе.* ■ *Сәрбиямалдың өйрәгә бер оя бәпкә сығарҙы.* З. Биишева.

**2.** *эйл. ф.* **бәпкәм** Балаға иркәләп, яратып әйтелә. *Йәтим үҫтем, бәпкәм тиеп, иркәләүсем минең булманы.* Ғ. Хәйри.

♦ **Бәпке йөнө** кешенең тәнендәге вак ҡына йомшаҡ йөн. *Йәнтимерҙең өҫкө иренендәге бәпкә йөндәре хәҙер мыйыҡ кеүек булып күренә.* С. Агиш. **Бәпкә уләне** *кар.* **үлән** [1].

**БӘПКӘ** [2] *и.* Балтырғандың яңы шытып сыҡҡан йәш япрағы (аш итеп бешерәләр). *Бәпкә ашы.*

**БӘПКӘ** [3] [*рус.* бабка] *и. диал.* Асамай.

**БӘПЛӘҮ** *к. диал.* Баплау.

**БӘПӘЙ** *и.* Сабый бала; бәпес.

**БӘПӘЙЛӘҮ** *к.* Бәпәй табыу; бәпесләү.

**БӘПӘҮЛӘҮ** *к. диал.* Иркәләтеү. *Балаларын бәпәүләп кенә үҫтерәләр.*

**БӘРАБӘР** *с. кар.* **бәрәбәр.**

**БӘРАТ** [*ғәр.*]: **бәрат байрамы** (*йәки* **кенә**) дин буйынса, Мөхәммәттең пәйғәмбәрлеккә килгән көнө (шәғбан айының 15-ендә; шул байрам хөрмәтенә, йәнәһе, дәфтәр алмашынып, яңынан башлана, йәғни шуғаса булған гөнаһтар юйыла). **Бәрат кисәһе** бәрат байрамы алдындағы кис.

**БӘРБӘР, бәрбәр ғәрәптәре** *и.* Башлыса Төньяҡ Африка илдәрендә йәшәгән халыҡтар төркөмө. *Бәрбәр телдәре. Бәрбәр халҡы.*

**БӘР-БӘР-БӘР** *сакр.* Һарыҡты саҡыра торған һүҙ.

**БӘРГЕЛӘНЕҮ** *к.* **1.** *кар.* **бәргеләү.** *Бәргеләнгән таш.*

**2.** *кайт. кар.* **бәргеләү.** *Тәзкирә .. күҙгәла алмай байтаҡ торҙо. Шунан бәргеләнә башланы.* Ә. Вәли.

**БӘРГЕЛӘҮ** *к.* **1.** Туҡтауһыҙ, ҡабат-ҡабат бәреү. *Бәргеләп бөтөү. Таш менән бәргеләү.*

**2.** *кар.* **бәргесләү.**

**БӘРГЕСЛӘҮ** *к.* **1.** Кемгә йәки нимәгәлер тоҫҡап-тоҫҡап бәреү. *Таш менән бәргесләү. Бәргесләп бөтөү.*

**2.** Уңлы-һуллы һуғыу. *Бәргесләп алыу.*

**БӘРҘЕ** *и.* Һөмбаштар ғаиләһенә ҡараған сөсө һыу балығы. *Аҡ бәрҙе. Ҡара бәрҙе. Бәрҙе ҡармағы.* ■ *Бәрҙе бик сос балыҡ, һаҡ ҡына йөрөмәһәң, тотормон тимә.* Ф. Иҫәнғолов.

**БӘРҘЕРЕҮ** *к. йөкм. кар.* **бәреү** 1—4.

**БӘРЕЙ** [*фарс.*] *и.* **1.** Сихырға һәләтле яман мифик зат.

**2.** *кусм.* Тәртипһеҙ, еңмеш балаға һәм уҫал, сарға ҡатын-ҡыҙға әрләп әйтелә.

♦ **Бәрей алмаштырыу** ырым буйынса, баланың аҡылы йәки тәне сәңгелдәктән үк зәғиф булғанда әйтелә. **Бәрей алмаштырған** бик ҡыҙыу, ныҡ дыуамал кешегә әйтелә. **Бәрейе(м) һөймәй** берәй нәмәне йәки кешене ныҡ яратмағанда әйтелә.— *Бәрейем һөймәй шул һыпатһыҙ быжырҙы,— тине Фатима эстән.— Ҡыҫылмаған ере юҡ, йөрөй эшем әйәһендәй булып, һөмһөҙ.* Ж. Кейекбаев. **Дейеү бәрейе** *кар.* **дейеү.**

**БӘРЕЛЕҮ** *к.* **1.** Көс менән барып йәки килеп һуғылыу. *Хәбир бабайҙың йөҙөнә һалҡын ел бәрелде.* З. Хисмәтуллин. *Мәскәй бот-сат килеп, стенаға барып бәрелгән* (Әкиәттән).

**2.** Шаңғырап, барып һуғылыу. *Мылтыҡ тауышы тау-таш, урманға бәрелеп, яңғырап китте.* Т. Хәйбуллин. / Һауа менән килеп ҡағылыу. *Дым бәрелә. Еҫ бәрелә. Әҫе бәрелә. Ялҡын бәрелә.* ■ *Ирочканың тәндәренән рәхәт, тәмле булып йылы бәрелә.* Д. Юлтый.

**3.** *кусм.* Кешегә тел, һүҙ менән ҡағылыу. *[Күл батшаһы] егеткә бер ҙә ҡаты бәрелмәҫкә, күңелен табырға булды, ти* (Әкиәттән).

♦ **Ары бәрелеп, бире һуғылыу** *кар.* **ары. Күҙгә бәрелеү** *кар.* **күҙ. Кемгә барып бәрелергә белмәү** кемдән кәңәш, ярҙам һорарға белмәй аптырағанды белдерә. *[Ильяс] кемгә барып бәрелергә, ҡайғыһын кем менән уртаҡлашырға белмәй яфаланды.* Ғ. Ибраһимов. **Ҡайҙа барып бәрелергә белмәү** сара, толҡа тапмай аптырағанды белдерә.— *Көн оҙон нисек ваҡыт үткәрергә, ҡайҙа барып бәрелергә белмәйем.* Ә. Бикчәнтәев.

**БӘРЕЛЕШ** *и.* **1.** Ҡара-ҡаршы төкәлеш. *Ҡаршы килгән ағымдарҙың бәрелеше арҡаһында өйөрмә барлыҡҡа килә.*

**2.** Ике арала килеп сыҡҡан талаш, тартыш. *Асатай Ныязғол менән булған бәрелешен һөйләне.* Һ. Дәүләтшина.

**3.** Ҡара-ҡаршы осрашҡан ҡоралды һуғыш. *Ҡораллы бәрелеш.* / Ике аралағы ниҫкен көрәш. *Синфи бәрелештәр.*

**БӘРЕЛЕШЕҮ** *к.* **1.** *урт. кар.* **бәрелеү** 1.

**2.** Икәү-ара талаш, тартыш ҡуптарыу. *Бәрелешеп алыу.*

**3.** Ҡара-ҡаршы килеп һуғышыу. *Улар [аҡтарға киткән кешеләр] ҡыҙылдар менән бәрелешкән саҡта .. ҡырылып ҡалды.* Һ. Дәүләтшина.

**БӘРЕҮ** *к.* **1.** Ҡулға тотоп ситкә йәки тоҫҡап ырғытыу. *Таш бәреү. Атып бәреү. Ҡутәреп бәреү.* ■ *[Мужиктар] эләккән бер нәмә менән полицейҙарға бәрергә тотонған.* М. Тажи. *Урал дейеүҙе йән асыуы менән атып бәрҙе, ти.* «Урал батыр».

**2.** Көс менән килеп һуғылыу. *Буҙ толпар һаҡсыларҙы бәреп йыҡты ла сығып сапты, ти* (Әкиәттән). / Һауа менән килеп ҡағылыу. *Йылы бәрә.* ■ *Юрғандың әллә ҡайһы еренән һыуыҡ бәргәндәй булды.* С. Агиш. / *кусм.* Нимәгәлер (баш, йөрәк һ. б.) ныҡ тәьҫир итеү. *Ҡайғылы хәбәр йөрәгенә бәрҙе.* ■ *Аҡландарҙың ҡымыҙы ай-һай уҫал, йотомонан бәрә мейегә.* Р. Бикбаев.

**3.** Берәй нәмәгә ҡуша килтереп һуғыу. *Ағын һыу һалдың ҡойроғон ташҡа бәрҙе.* / Һауа менән килтереп ҡағыу. *Талғын ғына өргән елбәҙәк ел .. сәскә еҫтәрен ҡыуып, биткә бәрә.* Т. Хәйбуллин.

**4.** Тәнде, аяҡ-ҡулды абайламаҫтан бер нәмәгә һуғыу; төкөү. *Башты бәреү. Ҡулбашты бәреү.*

**5.** Кешене ныҡ итеп һуғыу. *Бәреп йығыу. Бәреп осороу.* / *кусм.* Ата торған ҡорал менән зыянлау; атыу. ■ *— Беҙҙекеләр ниместәрҙең самолёттарын берәм-берәм бәреп төшөрә баш-*

лаған. М. Тажи. *Тәҙрә аша башына атабыҙ тип, һул ҡулбашына бәргәндәр.* Ә. Вәли.

**6.** Ниҙеңдер эсенән тышҡа тибеү, тышҡа атылыу. *Бәреп сығыу. Таш аҫтынан шишмә бәреп ята.* / *күсм.* Күңел эсенән тышҡа тибеп, ҡылыҡ, ҡиәфәттә сағылыу. *Биткә бәреп сыҡҡан ҡыҙыллыҡ.* ■ *[Йәнбикәнең] асыуы йөҙөнә бәреп сыҡты.* М. Хәйҙәров.

**7.** *күсм. һөйл.* Ныҡ, ҡәтғи, тура итеп әйтеү. — *Улар .. иҫән булһа, һиңә силсәүиттә ултырырға тура килмәҫ ине,— тип бәрҙе теге кеше.* И. Ғиззәтуллин.

♦ **Башты ташҡа бәреп булмай** *ҡар.* **баш. Бәреп инеү** ҡаршылыҡты еңеп, ҙур ҡыҙыулыҡ, тиҙлек менән килеп инеү. *Өйгә бәреп инеү.* ■ *Ауылға ҡапыл бәреп инһәк, аҡтар араһында паника ҡуптарыр инек.* Б. Хәсән. *Йөрәктәргә бәреп инһен йырым.* З. Биишева. **Бәреп сығып китеү** ҙур тиҙлек менән ситкә йүгереү йәки сабыу. **Күҙенә бәреп әйтеү** ныҡ, тура, ҡаты итеп әйтеү.

● *Бәреп әйткәндең гәйебе юҡ.* Әйтем.

**БӘРЕШЕҮ** *к. урт. ҡар.* **бәреү** 1.

**2.** *диал.* Ни менәндер кешегә бәргеләү. *[Салих:] Һин ниңә таш менән бәрешәһең?* Х. Мохтар.

**БӘРЛЕГЕҮ** (бәрлек*ә*) *к.* Ҡапыл килеп бер нәмәгә һуғылыу; төкөлөү. *Ҡоймаға бәрлегеү.* ■ *Исхаҡ .. өҫтәлгә тып-тып бәрлеккән күбәләктәрҙе ҡыуырға тырыша.* Ш. Янбаев.

**БӘРСӘК** [1] [*фарс.*] *и.* Ваҡ-ваҡ итеп ҡырҡылған йәки ярылған киҫәк. *Утын бәрсәге.*

**БӘРСӘК** [2] *и.* Бәрҙе балаһы, ваҡ бәрҙе.

**БӘРСӘКЛӘНЕҮ** *к. төш. ҡар.* **бәрсәкләү.**

**БӘРСӘКЛӘҮ** *к.* Ваҡ-ваҡ, йоҡа-йоҡа итеп ҡырҡыу, ярыу (ҡаты йәки туң нәмәне); сәрпәкләү. *Туң итте бәрсәкләү. Утынды бәрсәкләп бөтөрөү.*

**БӘРСӘК-ҺӘРСӘК** *и. йыйн.* Кәрәктән тыш ваҡ киҫәктәр.

**БӘРСӘЛӘҮ** *к. диал.* Бәрсәкләү.

**БӘРХӘТ** [*рус.* бархат < *нем.* < *гәр.*] *и.* Уң яғы ҡыҫҡа ғына ҡуйы йомшаҡ өбөрө менән һуғылған, ғәҙәттә, ебәк туҡыма. *Йәшел бәрхәт. Ҡара бәрхәт. Ҡыҙыл бәрхәт.* // *Бәрхәт камзул. Бәрхәт такыя.* **Бәрхәт һымаҡ** йомшаҡ нәмәгә ҡарата әйтелә. *Ер күкрәге бәрхәт һымаҡ йомшаҡ.* М. Тажи.

♦ **Амур бәрхәте** пробка ағасы. *Амур бәрхәте Өфөлә үҙен хужа итеп һиҙә башланы.* «Совет Башҡортостаны», 1965, 24 апрель. **Бәрхәт гөл** *ҡар.* **гөл.**

**БӘРӘБӘР** [*фарс.*] *с.* **1.** Үҙ-ара тиң, тигеҙ. *Бәрәбәр булыу. Ауырлығы бәрәбәр таштар.* ■ *Ялғанлыҡ һәм урлыҡ һөкөмдә бәрәбәрҙер.* М. Өмөтбаев. *Рөстәмгә үҙ һынына бәрәбәр башҡаларҙан өҫтөн булыу килешеп тора.* Ф. Иҫәнғолов.

**2.** *и. мәг.* Нимәгәлер тиң булған күләм, сифат. *Ошо хеҙмәт бәрәбәренә улар миңә көнөнә бер-ике мәртәбә сәй эсерәләр, аш ашаталар.* М. Ғафури.

♦ **Бәрәбәр күреү** тиң күреү, бер тигеҙ күреү. **Шуның менән бәрәбәр** шул уҡ ваҡытта, шуның менән бергә.

**БӘРӘК** *ымл.* Аптырағанда, ғәжәпләнгәндә әйтелә.— *Бәрәк, был бит бисә кеше, яулығы ялпылдап килә.* Т. Килмөхәмәтов.

♦ **Аңра бәрәк** әрләп, мыҫҡыллап әйтелә. *Эй, аңра бәрәк, шуны ла белмәй.*

**БӘРӘКАЛЛА** [*гәр.*] *ымл.* Хуплау, шөкөр итеүҙе белдергәндә әйтелә.— *Һаумы, Камали ағай?* — *Бәрәкалла, үҙегеҙ нисек тораһығыҙ?* Ғ. Хәйри. *Бәракалла, егет, гәйрәтеңә, тар-мар килә дошман яуҙары.* М. Ғафури.

**БӘРӘКӘС** *ымл. ҡар.* **бәрәк.**

**БӘРӘКӘТ** [1] [*гәр.*] *и.* **1.** Тормош, көнкүрештәге материаль муллыҡ, иркенлек. *Бәрәкәт килтереү.* ■ *Шулар инде [бей, түрәләр] ер һатып, йортто талап, бәрәкәтте ебәргәндәр илегеҙҙән.* Д. Юлтый. / Бер нәмәгә муллыҡ теләгәндә әйтелә. *Көрәгәгә бәрәкәт! Ырҙынға бәрәкәт! Йортҡа бәрәкәт!*

**2.** Күпкә етә, файҙа бирә торған сифат; ҡәҙер, файҙа. — *Ҡуйсәле,— тигән ул [Язар карт],— малды һанаһаң, бәрәкәте ҡаса ла ул.* Б. Бикбай.

● *Бәрәшән ҡулда бәрәкәт юҡ.* Мәҡәл. *Хәрәкәттә — бәрәкәт.* Әйтем.

**БӘРӘКӘТ** [2] *ымл.* Аптырағанда әйтелә. *[Бәҙекәй әбей:] Бәрәкәт, индермәйҙәр ҙаһа!* С. Агиш.

**БӘРӘКӘТЛЕ** *с.* **1.** Муллығы, именлеге менән яҡшы; ҡотло. *Бәрәкәтле тупраҡ.* ■ *Эй Уралым, бәрәкәтле төйәк! Рәхмәт яуһын һиңә халҡыңдан, яралғанһың аҫыл таштарҙан һин, яралғанһың — тотош алтындан.* «Ленин менән һөйләшеү», 1968.

**2.** Бөтмәй, оҙаҡҡа етә торған. *Бикмырҙа ағайҙың өйө йылы, өҫтө таҙа, тапҡаны бәрәкәтле булды.* Ф. Иҫәнғолов. *Бик бәрәкәтле булды был варенье. Ҡунаҡтар алдына ла мул-мул итеп ҡуябыҙ, үҙебеҙҙең өҫтәлдән дә варенье өҙөлмәй, үҙе һис кәмемәй.* М. Садиҡова.

**БӘРӘКӘТҺЕҘ** *с.* Самалаған ваҡытҡа етмәй, тиҙ бөткән. *[Нигмәтулла:] Бер бот он алғанға әле бер аҙна ла юҡ. Шул бөттөмө?.. Ниңә бик бәрәкәтһеҙ булды?* М. Ғафури.

**БӘРӘКӘТҺЕҘЛӘНЕҮ** *к. төш. ҡар.* **бәрәкәтһеҙләү.**

**БӘРӘКӘТҺЕҘЛӘҮ** *к.* Бәрәкәтен, ҡотон ебәреү; ҡәҙерһеҙләү. *[Мортаев — Шәмсиәгә:] Ҡара инде, ә! Аш бәрәкәтһеҙләп, кемде һыйлап сығарған?!* С. Сәйетов.

**БӘРӘМЕС** [1] *и.* Ауыҙын асыҡ итеп бешергән эремсек йәки бәрәңге бәлеше. *Бәрәңге бәрәмесе. Ҡыҙыл эремсек бәрәмесе.*

**БӘРӘМЕС** [2] *ымл. диал. ҡар.* **атаҡ** [2].

**БӘРӘМЕТ** [*рус.* перемёт] *и.* Эре ҡармаҡ теҙеп, һыуға арҡыры тартҡан бау; еле. *Бәрәмет ҡуйыу.*

**БӘРӘН** *и.* **1.** Имеп туҡтағандан икенсе бәрәсләгәнгә тиклемге кәзә, һарыҡ. *Бәрән йөнө.* // *Бәрән кәзә. Бәрән һарыҡ.*

**2.** *с. мәг.* Шул кәзә, һарыҡтың тиреһенән тегелгән. *Бәрән тун.*

**БӘРӘНЛӘҮ** *к. диал.* Бәрәсләү.

**БӘРӘҢГЕ** *и.* [*укр.* бураки] **1.** Эт ҡарағаты кеүектәр ғаиләһенә ҡараған крахмалға бай бүлбеле йәшелсә. *Бәрәңге ултыртыу. Бәрәңге төбөн күмеү. Бәрәңге ялаһы.*

**2.** Шул үҫемлектең тамырындағы ашай торған бүлбеһе. *Аҡ бәрәңге. Ҡыҙыл бәрәңге. Эре бәрәңге. Ярмалы бәрәңге. Ҡурған бәрәңге. Бәрәңге иҙмәһе.* ■ *Хужа ҡарсыҡ йоморолай бәрәңге бешереп ҡуйған. Ул бәрәңгеһенең боҫон борҡоратып сүлмәген өҫтәлгә килтереп ултыртты.* Ж. Кейекбаев.

**БӘРӘҢГЕЛЕК** *и.* Бәрәңге сәселә торған ер.

**БӘРӘҢГЕЛӘНЕҮ** *к.* Бәрәңге тамырында бүлбеһе тумалыу, яралыу. *Бәрәңге бәрәңгеләнә башлаған.*

**БӘРӘС**[1] *и.* **1.** Тыуғандан имеп туҡтағанға тиклемге кәзә, һарыҡ. *Кәзә бәрәсе. Һарыҡ бәрәсе. Көҙгө бәрәс. Яҙғы бәрәс. Бәрәс тиреһе.* ■ *Һарыҡ бәрәсләп биргәс, саҡ-саҡ туңманы бәрәс. Шуға өйгә индерҙек, шешәнән һөт имдерҙек.* Ә. Әхмәтҡужин.

**2.** *с. мәғ.* Шул кәзә, һарыҡтың тиреһенән тегелгән. *Бәрәс бүрек.*

♦ **Бәрәс һалыу** көнө етмәҫ элек имгәнеп, үле бәрәс килтереү.

**БӘРӘС**[2] *ымл.* Ҡапыл аптырағанда, ғәжәпләнгәндә әйтелә.— *Бәрәс,— тине ябай башҡорт ҡатыны,— электрҙы белмәҫ нindәй аҡыл ул?* Х. Ғиләжев.

**БӘРӘСЛӘТЕҮ** *к.* Һарыҡ-кәзәнән бәрәс алыу, бәрәс килтертеү. *Тәрбиә яҡшы, аҙыҡ мул булғас, фермала һарыҡтарҙы бәрәсләтеү уңышлы бара.* «Совет Башҡортостаны», 1979, 31 ғинуар.

**БӘРӘСЛӘҮ** *к.* Бәрәс килтереү. *[Сәрбиямал:] Анауы бәрәсләргә торған оҙдой һарығымдың бәрәсен туңдырып ҡуйһағыҙ, йәнегеҙҙе алырмын!* З. Биишева.

**БӘРӘҮЕЗ** [*фарс.*] *и. диал. ҡар.* **ау** 1, 2.

**БӘРӘ-ҺӘРӘ** *с. диал.* Аңҡы-тиңке.

**БӘРӘШӘН** *с.* Аҙыҡ-түлек йәки башҡа нәмәне самалап, кәрәгенсә генә тотона белмәгән; һаҡлыҡһыҙ. // *Бәрәшән тотоноу.*

● *Бәрәшән ҡулда бәрәкәт юҡ.* Мәҡәл.

**БӘРӘШӘНЛӘНЕҮ** *к.* **1.** Һаҡлыҡһыҙ, бәрәшән ҡыланыу. *[Ҡарсыҡ:] Нотоҡ уҡыуым түгел [килен], оло буларак, кәңәш итеп әйтеүем генә: әҙер донъяға төштөм, тип, бәрәшәнләнеп, мал туҙҙырма. Хәләлде харамға сайыуҙан аң булығыҙ.* Т. Ғарипова. *Ялбыр шулай бәрәшәнләнеп йөрөй бирә, ти. Күп тә үтмәй, Ялбыр бөлгән дә ҡуйған, ти* (Әкиәттән).

**2.** Теләһә нисек тәләф иттелеү, әрәм-шәрәм ителеү. *Ул [бай] эште батрактарына ҡушты ла үҙе, иген яҡшы итеп йыйыламы, башаҡ сәселепме, бәрәшәнләнеп, туҙғылып ятмаймы тип, тикшереп йөрөнө.* Ғ. Дәүләтшин.

**БӘРӘШӘНЛӘҮ** *к.* Самалап, кәрәгенсә генә тотонмай, теләһә нисек тәләф итеү. *Бесәнде бәрәшәнләп бөттөләр ҙә мал ас тора.*

**БӘС**[1] *и. ҡар.* **бәз.**

**БӘС**[2] [*фарс.*] *инш. иҫк.* Тимәк. *Бәс, шулай,— ти Усман бабай,— яуҙарҙы еңеп сыҡтыҡ.* С. Кулибай. *[Хәҙрәт:] Ерҙең урмандары, сәскәләре, тауҙары, тигеҙлектәре бар. Бәс, шулай булғас, бай ҙа, ярлы ла бар тигән һүҙ.* Ғ. Хәйри.

**БӘСЕҮ** *к. диал. ҡар.* **сәлдереү** 1.

**БӘСӘ** *и. диал.* Баса.

**БӘСӘЙ** *и. диал.* Бәкәл.

**БӘСӘЛ** *с.* Оҙаҡ атлай алмай ултырған (балаға ҡарата).

**БӘҪ**[1] *и.* **1.** Нәмәгә йәм, тәм биреп торған яҡшы сифат; күрк, йәм. *Бәҫен ебәреү.* ■ *[Килен:] Ҡәйнәм, ин инде тиҙерәк, Сәйҙең бәҫе китә бит.* И. Ғиззәтуллин.

**2.** Кеше ҡаршыһындағы ҡәҙер; күрк. *Бәҫте һаҡлау.* ■ *[Ҡунаҡбикә:] Йә, йә юҡҡа ҡунаҡтың бәҫен ебәреп торма. Башҡа ваҡытта, урамда әрләшерһең.* Д. Юлтый.

**3.** Кешенә эшкә һәләтле иткән көс, ғәйрәт. *Бәҫтән тайыу.* ■ *Һалдаттарҙың, оҙаҡ мәшәкәтләнеп, бәҫе ҡайтҡан ахыры. Штанга эргәһенә барырға береһе лә баҙнат итмәй.* Н. Мусин.

● *Ир намыҫы — ат бәҫе.* Мәҡәл. *Майыңды ҡыштан сығарма, ҡатыныңды бәҫтән сығарма.* Мәҡәл.

**БӘҪ**[2] *и.* **1.** Саҫҡау һыуыҡта ағасҡа йәки башҡа нәмәгә өрпәк кенә булып ҡуна торған ҡырау. *Бәҫ баҫыу. Бәҫ ҡаплау.* ■ *Туғайҙарға болот ҡатыш төшә аҡ томан. Мамыҡ төҫлө бәҫ бөркәнә әрәмә, ҡыуаҡ.* М. Тажи.

**2.** *диал. ҡар.* **томан** 1. *Бәҫ күтәрелде, яуыр.*

**БӘҪ**[3] *и. диал.* Бәз.

**БӘҪЛЕ** *с.* **1.** Нәмәгә йәм, тәм биреп торған яҡшы сифатлы; күркәм. *Бәҫле кейем. Бәҫле һый.*

**2.** Кеше алдында ҡәҙерле; абруйлы. *Ауылдың бәҫлерәк ирҙәре менән буласаҡ председатель хаҡында ла һөйләшергә кәрәк ине.* Ф. Иҫәнғолов. *Байтаҡ көндәр уҙған һуң, бәҫле ҡунаҡ булған һуң, Урал иртүк торған, ти. Һомайҙы сағырып алған, ти.* «Урал батыр».

**БӘҪЛЕ**[2] *с.* Бәҫ[2] менән ҡапланған. *Бәҫле, сап-сал бөгөн урман, ер ябынған ап-аҡ өрпәк ҡалын юрған.* Ҡ. Даян.

**БӘҪЛЕК**[1] *и.* Кеше алдында ҡәҙерле хәл. *Бәҫлек һаҡлау.* ■ *[Байбисә:] Йә, был ни тигән эш — ҡояш аулағанса йоҡлау, был нindәй бәҫлек.* Т. Хәйбуллин.

**БӘҪЛЕК**[2] *с. диал.* Бәләкәй, тәбәнәк буйлы (ҡатынға ҡарата).

**БӘҪЛӘНДЕРЕҮ** *к.* Бәҫ[2] (1 мәғ.) менән ҡапланыу.

**БӘҪЛӘНЕҮ** *к.* Бәҫ[2] (1 мәғ.) менән ҡапланыу. *[Аттың] иртәнге һалҡынға бәҫләнгән арҡаһынан боҫо борҡорап тора.* С. Агиш.

**БӘҪҺЕҘ** *с.* Арыған, талған, хәлһеҙ. *Ялан эшенән бәҫһеҙ булып ҡайтыу.*

**БӘҪҺЕҘЛӘНДЕРЕҮ** *к. һир.* Көс, хәлдән яҙҙырыу, хәлдән тайҙырыу.

**БӘҪҺЕҘЛӘНЕҮ** *к. һир.* Ныҡ арып, көс, хәлдән тайыу; арманһыҙ булыу.

**БӘҪҺЕҘЛӘҮ** *к.* Әрһеҙ кейеп, ҡәҙерен ебәреү; ҡәҙерһеҙләү. *Кейемде бәҫһеҙләү.*

**БӘҪӘРЕҮ** *к.* **1.** Дым тартып, күгәреү; сереү. *Бәҫәргән бесән.* ■ *Һандыҡ төбөндә бәҫәреп ятҡан .. нәмәләр, ҡунаҡтар күрһен өсөн генә, урҙаға менгән.* Ж. Кейекбаев. / Иҫкереп, сереп, күк менән ҡапланыу. *Түбә таҡталары күгәреп, бәҫәреп бөткән.* И. Көҫәпҡол. *Иҫкергән, бәҫәргән был өйҙөң эсе лә бик ярлы.* С. Агиш.

**2.** *күсм.* Ҡартайып, һүнеп, ҡарыуһыҙланыу. *Шулай, иҫке тормошта күп тороп, ҡартайған*

*ул элек, бәҫәргән. Ләкин хәҙер яңы көстәр, яңы йәш рухтар менән йәшәргән.* М. Ғафури.

**БӘҪӘРТЕҮ** *к.* Киптермәй яткырып, күгәртеү, серетеү. *Бесәнде бәҫәртеү. Кейемде бәҫәртеү.*

**БӘТЛЕК** *и. диал.* Яуызлык, насарлык. *Бәтлек кылыу.*

**БӘТСӘ** [*фарс.*] *и. иҫк.* Хеҙмәтсе малай. *Ун дүрт—ун биштәргә еткәс, ишан уны [Мәтякупты] үҙенең бәтсәһе иткән, мыйык сыга башлагас, бәтсәлектән сыгарып, мәҙрәсәгә биргән.* А. Таһиров.

♦ **Бай бәтсә** бай балаһы.

**БӘҮ-БӘҮ** *ымл.* Йәш баланы көйләп бәүеткәндә әйтелә; әүәй-әүәй. *Бәү-бәү, бәү-бәү, йом күҙең, йокла, балам, йондоҙом* (Сәңгелдәк йырынан).

♦ **Бәү-бәү итеү** *бал.* йоклау.

**БӘҮЕЛ** [*гәр.*] *и.* Матдәләр алмашыныу аҙығы буларак бөйөрҙән бүленеп, организмдан һейҙек юлдары аша тышка сыккан шыйыклык; һейҙек. *Бәүел кыуыгы. Бәүел юлы. Бәүел итеү.*

**БӘҮЕЛГЕС** *и. диал.* Бәүелсәк.

**БӘҮЕЛДЕРЕК** *и. диал.* Бәүелсәк.

**БӘҮЕЛДЕРЕҮ** *к.* Ян-якка сайкалдырыу, бәүелтеү, тирбәлдереү. *[Карт] аяктарын бәүелдереп арбала гәмһеҙ генә ултырган .. малайга кыскырҙы.* Я. Хамматов. *Тулкындарҙы бәүелдереп, елбер-елбер ел уҙа.* С. Әлибаев.

**БӘҮЕЛЕҮ** *к.* **1.** Бауланып, бер яктан икенсе якка сайкалыу. *[Булат:] Япма аҫтындагы дилбәгәне бәйләп, бәүелгес эшләнем дә .. башта үҙем бәүелеп караным.* К. Кинйәбулатова.

**2.** Торған йәки ултырған ерҙән ян-якка сайкалыу. *Урмандарҙа агас бәүелгән, болот тетрәп, ямгыр түгелгән.* М. Кәрим. *Ат юргалай, сана йомшак һелкенә, Йәноҙак бара бәүелеп хыял иркенә.* А. Игебаев. / Тулкын-тулкын булып, һалмак кына һелкенеү; тирбәлеү. *Ярылган снарядтар көсөнә ер бәүелә.* Д. Юлтый. *Һап-һары бойҙай диңгеҙе терегөмөш шикелле бәүелеп ята.* «Совет Башкортостаны», 1976, 10 август.

**БӘҮЕЛЙЕТЕҮ** *к.* Яй ғына, еңел генә бәүелтеү, әкрен генә тирбәлтеү.

**БӘҮЕЛЙЕҮ** *к.* Яй ғына, еңел генә бәүелеү, әкрен генә тирбәлеү. *Теплоходтар үтә бәүелйеп.* Я. Колмой.

**БӘҮЕЛСӘК** *и.* Бәүелеп уйнай торған кулайлама. *Бәүелсәктә бәүелеү.*

**БӘҮЕЛТЕҮ** *к.* Ян-якка сайкалтыу; тирбәлтеү, бәүелдереү. *Пароход артынан каса барган бейек тулкындар һалды быуындары менән бәүелтә.* Ж. Кейекбаев. *Хәтерләүҙән Сәриәнең тыны кыҫылды, теге кара нөктә лә тирбәлеп күйҙы. Тәүге бәпесен тапкас, Әлмөхәмәт катынын кулдарында шулай бәүелткәйне.* «Ағиҙел», 1985, № 6.

**БӘҮЕТЕҮ** *к.* **1.** Ян-якка сайкау; тирбәтеү. *Баланы бәүетеү. Сәңгелдәкте бәүетеү.* ■ *[Низам — кыҙына:] Сәңгелдәктә яткан сактарыңда, .. һине төнгө сәгәттәрҙә тороп бәүетә инем.* Р. Ниғмәти.

**2.** *күсм.* Йөрәк, күңелде татлы хистәр менән наҙлау. *Беренсе һөйөүҙең йылы тулкындары унын [Гөлйөҙөмдөн] йәш йөрәген иркәләп бәүетә.* Һ. Дәүләтшина.

**БӘХЕТ** [*гәр.*] *и.* **1.** Бөтә яктан теүәл булып, ысын кәнәғәтлек, шатлык биргән якшы тормош хәле һәм хисе; ырыҫ. *Ак бәхет. Ил бәхете. Кеше бәхете. Бәхет табыу. Бәхет теләү.* ■ *Был донъякайҙарҙың рәхәтлегеен күреп булмай бәхет булмагас* (Халык йырынан). **Бәхет асылыу** эш, тормош уңайга китеү. *[Шәһиҙә әбей:] Кәйнешеңдең бәхете асылһын. Күрмәгә бик һәйбәт, бик һөйкөмлө бала.* Һ. Дәүләтшина.

**2.** Эш, тормоштағы уңыш. *Кул эйәһе үҙенең йылкы өйөрөнән иң якшы атты һайлап, Әбйәлилгә килтереп биргән. Әбйәлил көтмәгәндә килгән был бәхеткә кыуанып, аргымакка атланган да өйөнә сабып кайтып киткән, ти* (Әкиәттән). *[Мәгфиә:] Бәхетең — атайыңдар яусылатып өлгөрҙө. Югиһә, .. Сәбиләне алыр инең.* Б. Бикбай.

**3.** Башка төшкән яҙмыш; өлөш. *Бәхете баланан. Бәхете эштән.* ■ *[Бабайҙың] Биктимер исемле кесе улына бер насар гына ат караган, ти. «Ярар, бәхетем шулдыр инде»,— тип уйлаган, ти, Биктимер* (Әкиәттән). *Батшаның якын кешеләре тагы .. тауыш күтәрә. «Бәхетенә тура килгәс, ярар инде»,— ти батша* (Әкиәттән).

♦ **Аяклы бәхет** берәй кыуаныс алып килгән кешегә карата әйтелә. *Ғалим агай өйгә кайтып ингән аяклы бәхет булып күренде.* Д. Юлтый. **Бәхет аскысы** бәхет биргән сәбәп. **Бәхете бар икән** берәү бер якшы хәлгә осрағанда әйтелә. **Бәхете булһын** теләк теләп әйтелә. **Бәхете арткыр(ы)** берәүҙе йомшак итеп орошканда йәки берәй эшенә һокланғанда әйтелә. **[Кемдеңдер] бәхетенән** берәүгә уңай килгән бер нәмә булғанда йәки булырын теләгәндә әйтелә. *[Үмәр:] Балалар бәхетенән үҫеп китһә, әҙ булһа ла тамаклык булыр.* Һ. Дәүләтшина. **Бәхеткә каршы** берәй нәмәгә карата кәнәғәтлек белдергәндә әйтелә. *Бәхеткә каршы, Кола кашка бәлә-казага дусар булманы.* С. Кулибай. **Бәхет кошо** бәхет сығанағы һәм бәхет символы.

**БӘХЕТЛЕ** *с.* **1.** Бәхете булған, бәхете бар. *Бәхетле кеше. Бәхетле ил. Бәхетле булыу.* ■ *Беҙ бәхетле бала булһак, китмәҫ инек ил ташлап* (Халык йырынан). / Бәхет белдергән, бәхет менән һуғарылған. *Бәхетле караш. // Бәхетле йылмайыу.* ■ *Бәхетле генә тороп ятканда, Сөйәлбайҙың әсәһе үлеп киткән* (Әкиәттән).

**2.** Уңыш, шатлык бирерҙәй бер хәл-вакиғалы, бәхет менән тулы. *Бәхетле бала сак. Бәхетле тормош. Бәхетле яҙмыш. Бәхетле көн.*

♦ **Бәхетле бул** теләк теләгәндә әйтелә.

**БӘХЕТҺЕҘ** *с.* Бәхеттән мәхрүм булған, бәхете булмаған. *Бәхетһеҙ кеше.* ■ *Бәхетһеҙ башын кайҙа куйырга белмәй һаман зарыгып, һарыга һабышкан Зөлхизә.* Н. Иҙелбай. *Бәхеттең иң ҙуры беләһегеҙмениҙә? Бәхетһеҙ кешене бәхетле итеүҙә.* М. Хәй. / Кайғылы, борсоулы һ. б. хәлде белдергән. *Бәхетһеҙ киәфәт.*

♦ **Бәхетһеҙгә вакытһыҙ** кыҫтау вакытта көтөлмәгән тоткарлык килеп сыкканда әйтелә. *Бәхетһеҙгә вакытһыҙ тигәндәй, геологтар килеп төштө.* Ә. Вахитов.

● *Бәхетһеҙгә ел каршы.* Мәкәл.

**БӘХЕТҺЕҘЛЕК** *и.* Бәхетһеҙ хәл йәки ваҡиға. *Бәхетһеҙлеккә осрау.* ■ *[Ҡыҙҙар:] Йәштән бәхетһеҙ булған кешеләрҙең мөхәббәттәре лә бәхетһеҙлек менән бөтә.* Д. Юлтый.

♦ **Бәхетһеҙлеккә ҡаршы** үкенесте, көйөнөстө белдергәндә әйтелә. *Бәхетһеҙлеккә ҡаршы, .. көн боҙолоп китте.* М. Тажи.

**БӘХЕТ-ЫРЫҪ** *и. йыйн. ҡар.* **бәхет** 1.

**БӘХЕШ** [*фарс.*] *и. иҫк. кит. ҡар.* **бүләк** [1]. *Бәхеш итеү.*

**БӘХИЛ** [*фарс.*] *с.* Кемгәлер үпкә, асыу тотмаған, эш, ҡылығына риза булған, эш, ҡылығын ғәфү иткән. *Бәхил булыу. Бәхил итеү. Мин һинән бәхил.* ■ *[Атаһы — ҡыҙына:] Беҙҙең һүҙҙе тыңламаһаң, мәңге бәхил түгелбеҙ.* И. Көҫәпҡол. *Был китеүҙән ҡайта алмаһаҡ, бәхил булың, туғандар* (Халыҡ йырынан).

**БӘХИЛЛЕК** *и.* Кемдеңдер эш, ҡылығын ғәфү итеп әйткән ризалыҡ. *Бәхиллек алыу. Бәхиллек биреү. Бәхиллек һорау.* ■ *[Атаһы — улына:] Бәхиллек юҡ һиңә .. Беҙҙең йортҡа аяҡ баҫмаҫһың.* Ғ. Хәйри.

**БӘХИЛЛӘТЕҮ** *ҡ.* Өҫтәге бер бурысты ҡайтарып, ризалыҡ алыу. *Әсә хәстәре! Ах, уны ни менән генә бәхилләтеп бөтөрмәк кәрәк.* Ф. Иҫәнғолов.

**БӘХИЛЛӘҮ** *ҡ.* Кемдеңдер эш, ҡылығын ғәфү итеп, ризалыҡта ҡалыу. *[Зиннәт:] Күрше булып, һеҙгә бер йәберем тейməне. Ә һеҙҙән күргәндәремде бәхилләнем. Хушығыҙ.* Х. Ибраһимов.— *Һин минең ҡылған эштәремде бәхиллә,— тип ҡарт, ҡатынына ялынып илап ебәргән, ти* (Әкиәттән).

**БӘХИЛЛӘШЕҮ** *ҡ.* Үҙ-ара ризалыҡ алып, хушлашыу. *Бәхилләшеп китеү.* ■ *[Шафиҡ] ҡарт менән хушлашырға халыҡ күп йыйылды.. Берәүҙәре бәхилләшеп сыға, икенселәре инә.* Ә. Вахитов.

**БӘХИЛЛӘШТЕРЕҮ** *ҡ.* Өҫтәге бер бурысты ҡайтарып, ризалатыу; бәхилләтеү. *[Сәмреғош:] Балаларымды ҡотҡарған өсөн .. нимә менән генә бәхилләштерәйем икән* (Әкиәттән).

**БӘХМҮС** *и. диал.* Бәхмәт. *Умырзая тотоп, нисә тапҡыр кәкүктәрҙән хатта көнләшеп, ерән бәхмүсемдә һиңә саптым ҡалҡмаҫ элек ҡояш көндәшем.* С. Кулибай.

**БӘХМӘТ** *и.* Бик яҡшы йүгерек тоҡом аты.— *Һин ҡайныһы уҙыр тиең? — Күге.— Уҙыр, уҙмай ни. Турыһы уҙа! — Турыһы кем айғыры һуң? — Кемдеке икәнен белмәйем. Илла ул бәхмәт тоҡомонан.* Я. Хамматов.

**БӘХР** [*ғәр.*] *и. иҫк. кит. ҡар.* **диңгеҙ** [1]. *Бәхре Сыяһ. Бәхре Сәфит. Бәхре Хәҙәр.*

**БӘХТЕЙӘР** [*фарс.*] *с.* **1.** *шиғр.* Бәхетле, бәхете бар. *Сер бирмәй, ҡырын ятып ҡарап торһам, шул ваҡыт мин был донъяның бәхтейәре.* М. Ғафури.

**2.** (*баш хәреф менән*) Ир-ат исеме.

**БӘХӘС** [*ғәр.*] *и.* **1.** Берәй мәсьәлә тирәһендәге төрлө фекер, һүҙ көрәше. *Бәхәс асыу. Бәхәс ҡороу. Бәхәскә инеү. Бәхәскә килеү.* ■ *Балалар араһында ниҙер хаҡында ҡыҙыу бәхәс бара. Береһенең һөйләп бөтөүенә икенсеһе ҡушылып китә. Мәктәп геү килеп тора.* Б. Мирзанов./Берәй нәмә тураһында ҡапма-ҡаршы фекер булып, һәр кем үҙенекен дөрөҫ тип ныҡышҡанда, отолор кешегә алдан шарт ҡуйып эшләнә торған һүҙ көрәше. *Бәхәсте отоу. Бәхәсте оттороу.*

**2.** Мал-мөлкәт, хаҡ-хоҡуҡ өлкәһендәге үҙ-ара тартыш. *Сик буйы бәхәстәре. Хеҙмәт бәхәстәре.*

**БӘХӘСЛЕ** *с.* Бәхәс уятҡан, бәхәскә килтергән. *Бәхәсле мәсьәлә. Бәхәсле мал.*

**БӘХӘСЛӘШЕҮ** *ҡ.* Берәй мәсьәлә буйынса үҙ-ара төрлө фекер белдереп, һүҙ көрәштереү. *[Сафый менән Ғирфан] фәнни темаларға сәғәттәр буйы бәхәсләшә торғайны.* З. Биишева./Кемдеке дөрөҫтән һүҙ көрәштереп, шарт ҡуйышыу. *Ҡаҙаҡ араһында йөрөгән саҡта, ҡаҙаҡтар менән бәхәсләшеп, Илек һыуының иң киң еренән йөҙөп сыҡҡайным.* Д. Юлтый.

**БӘХӘССЕ** *и.* Бәхәстә ҡатнашҡан кеше.

**БӘХӘСҺЕҘ** *с.* **1.** Бәхәс уятмаған, бәхәскә килтермәгән. *Бәхәсһеҙ мәсьәлә.*

**2.** Ҡәтғи фекер белдергәндә әйтелә. *Ныҡ, ҡаты тәбиғәтле кешенең сәсе бик ағарып бармай. Был бәхәсһеҙ!* Х. Зарипов.

**БӘҺАР** [*фарс.*] *и. иҫк. кит.* Яҙ, яҙғы көн.

**БӘҺИӘТ** [*ғәр.*] *и. диал.* Ниҙеңдер аҡтығы, аҡтыҡ ризыҡ. *Бәһиәтен ашаған.*

**БӘҺЛЕҮӘН** [*фарс.*] *и.* **1.** Сиктән тыш көслө, ғәйрәтле кеше. *Һайлап-һайлап [Бабсаҡ] һигеҙ бәһлеүән алды, яу ҡоралын барын да тағып алды.* «Бабсаҡ менән Күсәк». *Ул [батша] ҡыҙын донъялағы иң көслө беһлеүәнгә генә бирергә итә* (Әкиәттән).

**2.** Бәйгеләрҙә көрәшкән кеше; батыр, көрәшсе. *Атаһы бәһлеүән булған.*

**БӘҺРӘ** [*фарс.*] *и. иҫк. кит.* **1.** Киҫәк, өлөш. *Был [Себерҙә йәшәгән] халыҡтар Россиянан алды бәһрә.* М. Ғафури.

**2.** Файҙа. *Һөнәремде хәйерһеҙ ҡылма, һүҙемде бәһрәһеҙ ҡылма.* М. Өмөтбаев.

**БӘҺШӘТ** [*ғәр.*] *и. иҫк. кит.* **1.** Матурлыҡ.

**2.** Ҡыуаныс. *Ҡауышыу бәһшәттер, ләкин дәһшәт йәһәннәмдер фирак.* Ш. Бабич.

**БӘШКӘК** *и. диал.* Бәшмәк.

**БӘШМӘК** *и.* **1.** Саң-һеркә ярҙамында үрсей торған хлорофилһыҙ иң ябай үҫемлек. *Ағыулы бәшмәк. Ашай торған бәшмәк. Тоҙло бәшмәк. Ағас бәшмәге.* **Баллы бәшмәк** нәҙек һабаҡлы, һарғылт ҡалпаҡлы йоҡа бәшмәк (көҙгөһөн ағас төбөндә үҫә). **Дуңғыҙ бәшмәге** йыуан һабаҡлы, эре ялпаҡ башлы, һорғолт көрән төҫлө ашай торған бәшмәк. **Ҡайын бәшмәге** көңгөрт һоро ҡалпаҡлы, аҫты ҡуҙәнәкле ашай торған бәшмәк (ҡайынлыҡта үҫә). **Ҡарама бәшмәге** серек ҡарамала ҡолаҡ рәүешендәрәк булып үҫә торған аҡ бәшмәк. **Ҡыу бәшмәк** ағасҡа йәбешеп үҫкән тояҡ һымаҡ ҡаты бәшмәк. **Төпөш бәшмәк** йыуан ҡыҫҡа һабаҡлы, ҡуңғырт көрән ҡалпаҡлы, аҫты ҡуҙәнәкле ашай торған бәшмәк. **Уҫаҡ бәшмәге** ҡыҙғылт һоро ҡалпаҡлы, аҫты ҡуҙәнәкле ашай торған бәшмәк. **Һары бәшмәк** көпшә һабаҡлы, ҡыҙғылт һары ҡалпаҡлы, аҫты ҡатлансыҡлы ашай торған бәшмәк. **Һаңғырау бәшмәк** туп һымаҡ ап-аҡ йомро бәшмәк (бешкәс, эсендә ҡара көрән саң барлыҡҡа килә). **Һарыҡ бәшмәге** ҡыҙғылт, алһыу

йәки ҡыҙғылт күк төҫтәге мурт ҡалпаҡлы, аҫты ҡатланҫыҡлы ашай торған бәшмәк.

**2.** *кар.* **үңәҙ.**

**БӘШӘЙ** *и. диал.* Башалтай.

**БӘШӘЛКӘҺЕҘ** *с. диал.* Бешәлкәһеҙ.

**БӘШӘЛТӘЙ** *и. диал.* Башалтай.

**БӘШӘЛӘЙ**[1] *и.* Аяҡ һөйәгенең тулаһыҡ менән бармаҡ һөйәктәре араһындағы өлөшө.

**БӘШӘЛӘЙ**[2] *и. диал.* Башалтай.

**БӘШӘР** [*ғәр.*] *и. иҫк. кит.* **1.** Кеше, кешелек донъяһы.

**2.** (*баш хәреф менән*) Ир-ат исеме.

♦ **Бәни** (*йәки* **әүләде**) **бәшәр** кешеләр, әҙәмдәр.

**БӘШӘРЕҮ** *к. диал. кар.* **бәҫәреү** 1.

**БӘЯЗ** [*ғәр.*] *и. иҫк. кит.* Ҡулъяҙманың ағы; аҡ. *Бәязға күсереү.*

**БӘЯН** *и. кар.* **баян**[2] 1.

**БЮДЖЕ́Т** [*рус.* ⟨*фр.*] *и.* Дәүләт йәки ойошманың билдәле бер ваҡытҡа ҡаралған керем һәм сығым сметаһы. *СССР дәүләт бюджеты.* / Кешенең шәхси керем һәм сығым мөмкинлеге. *Шәхси бюджет.*

**БЮЛЛЕТЕ́НЬ** [*рус.* ⟨*фр.*] *и.* **1.** Ижтимағи әһәмиәткә эйә булған төрлө эш, мәсьәлә тураһындағы ҡыҫҡаса рәсми белдереү. *Айлыҡ хеҙмәт бюллетене. Социалистик ярыш бюллетене. Бюллетень сығарыу.*

**2.** Берәй ойошма сығарған периодик баҫма исеме.

**3.** Депутатлыҡҡа кандидат кешенең исеме күрһәтелгән һайлау ҡағыҙы. *Һәм атланы бабай алға табан, көтмәгәнсә еңел ҡуҙғалып, бюллетенде һалғас, ҡарап торҙо урналарға, матур йылмайып.* Ғ. Ғүмәр.

**4.** Ауырыу кешенең ваҡытлыса эштән бушатылыуы тураһындағы ҡағыҙ. *Бюллетень алыу. Бюллетень биреү. Бюллетенгә сығыу. Бюллетендә йөрөү.*

**БЮРО́** [*рус.* ⟨*фр.*] *и.* **1.** Ҡайһы бер орган, ойошмаларҙың етәкселек итеү йәки күрһәтмә биреү бүлеге һәм шул бүлектең ултырышы. *Партия бюроһы. Бюро составы. Бюро ултырышы. Бюро ҡарары.* ■ *Бюро теүәл сәғәт икелә башланды.* Я. Вәлиев.

**2.** Ҡайһы бер ойошма йәки бүлектең исеме. *Белешмә бюроһы. Конструкторҙар бюроһы.*

**БЮРОКРА́Т** [*рус.* ⟨*фр.*] *и.* Хеҙмәт вазифаһын асылына төшөнмәй, формаль рәүештә генә башҡара торған кеше.

**БЮРОКРАТИ́ЗМ** [*рус.*] *и.* **1.** Халыҡты иҫәпкә алмай, иҙеүселәр синыфының ихтыяжынан ғына сығып бойомға ашырыла торған дәүләт идараһы.

**2.** Мәсьәләнең асылына төшөнмәй, формаль яғын ғына өҫтөн ҡуйып эшләү ысулы. *Бөгөн бюрократизм — беҙҙең төп бурысты хәл итеү — илебеҙҙең социаль-экономик үҫешен тиҙләтеү һәм ошоноң менән бәйле хужалыҡ итеү механизмын тамырынан үҙгәртеп ҡороу юлында етди кәртә.* „Совет Башҡортостаны", 1986, 26 февраль.

**БЮРОКРАТИК** *с.* Бюрократизмға хас. *Эшкә бюрократик мөнәсәбәт.*

**БЮРОКРАТЛАНЫУ** *к.* **1.** Бюрократҡа әйләнеү.

**2.** Бюрократтарса эш итеү.

**БЮСТ** [*рус.* ⟨*фр.*] *и.* Кеше кәүҙәһенең билдән йә күкрәктән юғарғы өлөшөн генә һүрәтләгән скульптура. *Баҡса эсендә, бейек постаментта бюст тора.* Х. Кәрим.

**БЮСТГА́ЛЬТЕР** [*рус.* ⟨*нем.*] *и.* Ҡатын-ҡыҙҙың түшен ҡаплап, йыйнаҡ итеп тота торған махсус эске кейем. *Бюстгальтер кейеү.*

# В

**В** [вә] Башҡорт алфавитының өсөнсө хәрефе.

**ВАБА** [*ғәр.*] *и.* Бер туҡтауһыҙ эсте китәреп, ҡоҫтороп, тән тартыштырып хәлде алған бик йоғошло сир; холера. *Ваба микробы. Ваба киҙеүе.* ■ *Бына королокло 1921—1922 йылдар. .. Был йылдың көҙөндә ваба ауырыуы башланды. Бөтә ғаиләһе менән кешеләр ҡырылды.* «Башҡортостан ҡыҙы», 1968, № 8.

● *Ете яуҙан ҡалған ирҙе ваба алмаҫ.* Мәҡәл.

**ВАБАЛ** [*ғәр.*] *и. иҫк. кит.* Бәлә, ҡаза.

**ВА́ГА** [*рус.*] *и.* **1.** Бик ҙур, ауыр нәмәне үлсәй торған ҡорамал; ҙур үлсәү.

**2.** *кар.* **һалмауыр.**

**ВАГО́Н** [*рус.* ⟨*ингл.*] *и.* **1.** Тимер юлдан йөк йәки кеше йөрөтөү өсөн ҡулайлаштырылған, тәгәрмәстәргә ултыртылған ҡоролма. *Йөк вагоны. Пассажирҙар вагоны. Трамвай вагоны. Почта вагоны. Йомшаҡ вагон. Купелы вагон. Плацкартлы вагон. Цистерналы вагон. Вагон ишеге. Вагон тәҙрәһе. Вагон күсәре. Вагондар эшләү заводы.* ■ *Вагон ике ҡат һәндерәле булып, беҙгә өҫкө ҡатта булырға тура килде.* Ғ. Хәйри. / Шуға тейәгән йөктө сама менән үлсәү берәмеге. *Дүрт вагон бүрәнә. Ике вагон күмер.* ■ *Унда истибдад — хазина, унда ғәйбәт — ун вагон.* Ш. Бабич. **Вагон әйләнеше** бер тәүлек эсендә станцияға килгән-киткән вагондарҙың ике күсәрле вагон иҫәбенә күсерелгән һаны.

**2.** *кар.* **вагончик.** *Баҫыу вагоны. Трактористар вагоны.*

**ВАГОНЕ́ТКА** [*рус.*] *и.* Тар тимер юлдан йәки аҫмалы юлдан йөрөй торған бәләкәй вагон йәки платформа. *Домна мейестәренә руданы ат егелгән вагонеткалар менән ташыйҙар.* М. Хәйҙәров.

**ВАГОНСЫҠ** *и. кар.* **вагончик.**

**ВАГО́НЧИК** [*рус.*] *и.* Тәгәрмәсле йәки саналы бәләкәй өй (ҡырҙа эшләгән кешеләр өсөн). *Хәҙер малсылар өсөн көтөүлектәрҙәге күсмә вагончиктар икенсе йорт булып һанала.* «Совет Башҡортостаны», 1965, 14 май.

**ВАГРА́НКА** [*рус.*] *и. тех.* Суйын һәм төҫлө металл иретә йәки башҡа төрлө материалдарҙы үртәй торған махсус мейес.

**ВАҒАЙТЫУ** *к.* **1.** Дәүмәл, күләм яғынан бәләкәйләтеү, ваҡҡа әйләндереү. *Королоҡ ағастарҙы вағайтты.*

**2.** *күсм.* Тарҡалдырып, экономик яҡтан бәләкәйләтеү.

**ВАҒАЙЫУ** *к.* **1.** Дәүмәл, күләм йәһәтенән бәләкәйләнеү, ваҡҡа әйләнеү (мәҫ. ҡоролоҡ тәьҫирендә). *Агастар вагайҙы.* / Кәүҙәгә бәләкәйләнеү; ваҡланыу. *Мал вагайҙы.*

**2.** *күсм.* Тарҡалып, экономик яҡтан бәләкәйләнеү, көсһеҙләнеү. *Хужалыҡ вагайҙы.*

**ВАҒИЗ** *и. ҡар.* **вәғиз.**

**ВАЖИБ** [*ғәр.*] *и. иҫк. кит.* Үтәлергә тейешле эш; бурыс.

**ВАЖИБӘТ** [*ғәр.*] *и. ҡар.* **важиб.** *Шул важибәт менән йөрөй торғас, белмәй ҡалдым ғүмерем үткәнен* (Халыҡ йырынан).

**ВАЖИҒА** *и. ҡар.* **вәжиғә.**

**ВАЗ** [*фарс.*]: **ваз кисеү** 1) берәй нәмәнән дүнеп, баш тартыу. *Алланан ваз кисеү. Тәмәкенән ваз кисеү.* ■ *[Секретарь — Ләләгә:] Берәй бәхетһеҙлек булдымы? Ерле юҡҡа ғына тормоштан ваз кисергә уйламағанһыңдыр бит.* Н. Мусин; 2) уй, күңел менән ситләшеү. *Арба өҫтөндә зекер әйтеп барған саҡтарында [муллалар] бөтә донъянан ваз кискән кеүек күренә.* М. Ғафури.

**ВА́ЗА** [*рус.* ⟨ *фр.*] *и.* Емеш-еләк һалыу, сәскә ҡуйыу йәки бүлмәне биҙәү өсөн ҡулланыла торған матур һауыт. *Ҙур вазаларға алма, әфлисун менән эре йөҙөм тултырып ҡуйылған.* Х. Мохтар.

**ВАЗҒИӘТ** [*ғәр.*] *и. иҫк. кит.* Билдәле бер хәл. *Башҡортостандың географик вазғиәте.*

**ВАЗЕЛИ́Н** [*рус.* ⟨ *фр.*] *и.* Нефттән алынған һарғылт май (техника һәм медицинала ҡулланыла). *Техник вазелин.*

**ВАЗЕЛИНЛЫ** *с.* Составында вазелин булған. *Вазелинлы һабын.*

**ВАЗИФА** [*ғәр.*] *и.* **1.** Өҫтәге бурыс. *Кешелек вазифаһы.* ■ *[Балаларға] үҙебеҙ киймәгәнде кейҙерҙек, .. йомарт булдыҡ, ата-әсәнең вазифаһы шулай, тинек беҙ.* С. Кулибай.

**2.** Хеҙмәт буйынса йөкмәлгән эш. *Директорлыҡ вазифаһы.* ■ *[Тереголов:] Муллабаев батрак балаһы, үҙе лә батрак, йәмғиәт эшендә актив ҡатнаша, үҙ вазифаһын башҡаларға үрнәк булырлыҡ итеп үтәй.* Б. Хәсән.

**3.** *иҫк.* Хеҙмәт хаҡы. *Утын юҡ, бик һыуыҡ мәктәп, фәҡир хәлфә нисек түҙһен, уның юҡ бит тамаҡ тундар — вазифа айға утыҙ һум.* Ш. Тульвинский.

*4.* (*баш хәреф менән*) Ҡатын-ҡыҙ исеме.

**ВАЗИФАЛЫ** *с.* Дәүләт эшендә билдәле бер вазифа башҡарған. *Вазифалы кешеләр граждандарҙың тәкдимдәрен һәм ғаризаларын билдәләнгән срокта ҡарарға .., һәм тейешле саралар күрергә бурыслы.* Башҡорт АССР-ының Конституцияһы, 1984.

**ВАЗИХ** [*ғәр.*] *с. иҫк. кит.* **1.** Яҡшы билдәле; асыҡ.

**2.** Асыҡ, төшөнөрлөк итеп аңлатыусы.

**3.** (*баш хәреф менән*) Ир-ат исеме.

**ВАЙ** *ымл.* Аптырағанда, үкенгәндә әйтелә. *Вай, үткән ғүмер! Вай, был йәшлек!*

♦ **Вай кем** йырлағанда ҡыҫтырып әйтелә. *Ҡаһым түрә менгән һоро юрға, вай кем, тояҡтары ҡупҡан, баҫа алмай* (Халыҡ йырынан).

● *Туйҙа һай ҙа һай, туй үткәс вай ҙа вай.* Әйтем.

**ВАЙ-ВАЙ**[1] *ымл.* Көй күтәргәндә әйтелә.

**ВАЙ-ВАЙ**[2] *и. диал.* Оҫкат.

**ВАЙРАН** [*фарс.*] *с.* Ватыҡ, емерек. *Ҡәрйә тиһәң дә, былырҙың йорттары вайран ине, ҡыш буйына ел-бурандан үҙҙәре хайран ине.* С. Яҡшығолов.

▭ **Вайран булыу** емерелеү, ҡыйралыу; һәләк булыу. **Вайран итеү** (*йәки* **ҡылыу**) ватыу, емереү; һәләк итеү, юҡ итеү. *[Хәмди:] Ғүмер иткән ояңды вайран итеп ташлап кит инде.* Ш. Янбаев.

**ВАЙЫМ** [*ғәр.*] *и.* Тынғы бирмәгән, нык борсоған уй; ғәм. *Тулыбай, донъяла һәр нәмәһе етеш, һис бер вайымы юҡ кеше һымаҡ, һүҙгә кереш[те].* Ғ. Дәүләтшин. **Вайымында ла юҡ** уйлап та ҡарамай, иҫкә лә алмай./Ҡайғы, хәсрәт. *Вайым сигеү.* ■ *Һаман күңелең тулышһа, аулаҡ ерҙә йәшең түк, йәшең йыуыр вайымыңды.* С. Ҡудаш.

**ВАЙЫМЛАНЫУ** *к.* Нимәлер тураһында борсолоп уйланыу.

**ВАЙЫМЛАУ** *к.* Нимәлер тураһында уйлап борсолоу. *Әсәһенә төшкән көс еткеһеҙ ауыр .. ҡайғы-хәсрәтте вайымламаған бала: «Әсәй, атайҙың хатын тағы уҡы»,— ти.* М. Тажи.

**ВАЙЫМЛЫ** *с.* Нимәнелер хәстәрләй, кем йәки нимә тураһындалыр борсола, ҡайғырта белгән. *Думбай булма, вайымлы бул һәр ерҙә.* А. Игебаев.

**ВАЙЫМСЫЛ** *с. ҡар.* **вайымлы.** *Вайымсыл кеше.*

**ВАЙЫМҺЫҘ** *с.* Бер нәмәгә лә иҫе китмәгән, борсола, уйлай белмәгән, хәстәрлек ҡылмаған; моңһоҙ, ғәмһеҙ. *Вайымһыҙ булыу. Вайымһыҙ бала саҡ.*//*Вайымһыҙ йөрөү.* ■ *Әйтмәйем иркә булдым тип, йәшәнем тип вайымһыҙ.* З. Биишева.

**ВАЙЫМҺЫҘЛАНЫУ** *к.* Вайымһыҙға әйләнеү, вайымһыҙлыҡ күрһәтеү. *[Янһаров] үҙенең һуңғы арала вайымһыҙлана төшөүенә эсе бош[то].* Б. Бикбай.

**ВАЙЫМҺЫҘЛЫҠ** *и.* Бер эш йәки хәлгә моңһоҙ ҡараш; ғәмһеҙлек, моңһоҙлоҡ. *[Студенттарға] уҡыу башта еңел һымаҡ тойола, ошо ялған хис бара-тора вайымһыҙлыҡ менән алмашына.* «Ағиҙел», 1971, № 9.

**ВАКА́НСИЯ** [*рус.* ⟨ *фр.*] *и.* Эштәге буш урын. *Вакансия булыу.*

**ВА́КСА** [*рус.* ⟨ *нем.*] *и.* Аяҡ кейеменә һөртөү өсөн балауыҙ, ҡором, туң май ҡушып яһалған май. *Итекте вакса менән таҙартыу.*

**ВА́КУУМ** [*рус.* ⟨ *лат.*] *и. физ., тех.* Герметик һауытҡа томаланған газ хәле; һауаһыҙ бушлыҡ. *Вакуумда ҡойолған ҡорос.*//*Вакуум аппарат.*

**ВАКХАНА́ЛИЯ** [*рус.* ⟨ *лат.*] *и.* **1.** Боронғо Римдағы шарап аллаһы Вакх хөрмәтенә үткәрелгән байрам.

**2.** *күсм.* Тәртипһеҙ эске мәжлесе.

**ВАКЦИ́НА** [*рус.* ⟨ *лат.*] *и. мед.* Йоғошло ауырыуҙың көсһеҙләндерелгән йәки үлтерелгән ҡуҙғытҡысынан эшләнеп, ауырыуҙан һаҡлау һәм дауалау өсөн кешенең, хайуандарҙың тәненә ебәрә торған дарыу. *Полиомиелит вакцинаһы. Туберкулёз вакцинаһы. Вакцина биреү.*

**ВАКЦИНАЦИЯ** [*рус.*] *и. мед.* Вакцина менән прививка яһау эше.

**ВАҠ** *с.* **1.** Ҡуләме, дәүмәле бәләкәй берәмектәрҙән торған; *киреһе* эре. *Ваҡ ком. Ваҡ тоҙ. Ваҡ ярма.* ■ *Күҙгә тартым эс бошорғос ваҡ ямғыр һибәләй.* Д. Исламов./Ҡыҫҡа аралы, йыш-йыш булған. *Ваҡ аҙым.*//*Ваҡ атлау. Ваҡ-ваҡ баҫып йөрөү.*

**2.** Буй-һыны, дәүмәле бәләкәй булған, ҙур түгел; *киреһе* эре. *Ваҡ ағас. Ваҡ балыҡ. Ваҡ кесерткән. Ваҡ ҡош. Ваҡ сыҫҡан. Ваҡ япраҡлы ағас.* ■ *Район үҙәге .. гел бер төҫлө ваҡ ҡына өйҙәрҙән тора.* М. Тажи. *Дейеүҙең үкергәнен ишетеп, тирә-яҡтағы вағыраҡ дейеүҙәр, аждаһалар ярҙамға килде, ти* (Әкиәттән)./Йәше, буйы бәләкәй, кесе йәштәге. *Урамда хәрәкәт юҡ. Өй тирәһендә .. уйнаған ваҡ балалар, ҡояш йылыһында ултырған ҡарттар ғына күренә.* Д. Юлтый.

**3.** Милке, мөлкәте бәләкәй, экономик яҡтан көсһөҙ. *Ваҡ буржуазия. Ваҡ крәҫтиән хужалығы.*

**4.** Һаны бәләкәй. *Ваҡ милләттәр.*

**5.** Йөкмәткеһе, әһәмиәте бәләкәй. *Ваҡ эш.* ■ *Ирҙәрҙең ҡайһы бер ваҡ нәмәләрҙе ҡатынына һөйләп бөтмәҫкә тейешлеген дә белә ул [Фатима].* Б. Бикбай. *Эште яратҡан, белгән кадрҙар һайлап алыу ваҡ мәсьәлә түгел.* «Совет Башҡортостаны», 1966, 1 март.

**6.** Ҡиммәте бәләкәй (аҡсаға ҡарата). *Ваҡ аҡса.*//*Ҡәләм алырға вағым булманы.*

**7.** *кусм.* Бәләкәй, тар маҡсатлы. *Эреләндең .. хәҙер,— тиһең .. Юҡ! Үҙең бит ҡалдың буғай, элеккесә шул ваҡ көйө.* Н. Нәжми.

**8.** *кусм.* Кәрәкмәгән бәләкәй нәмәгә иғтибар итеп бәйләнеүсән; ваҡсыл. *Ваҡ кеше.*

◆ **Быҫҡы вағы** *шул уҡ* **быҫҡы табы** (*ҡар.* **быҫҡы**). **Ваҡ мал** һарыҡ һәм кәзәләр. *[Сәлимә:] Тәүге ирем үлгәндә ике ат, ике һыйыр, кәртә тулы ваҡ мал ине.* Һ. Дәүләтшина. **Ваҡ сыр** *диал.* селбәрә. **Ваҡ һүҙле** бәләкәй генә нәмәне лә өҙмәй-ҡуймай һөйләүсән. *Ваҡ һүҙле кеше.* **Икмәк вағы** *ҡар.* **валсыҡ.**

**ВАҠАЙ** *с.* **1.** Маҡсаты бәләкәй, түбән мәнфәғәтле. *Гейне немец буржуаһының, обывателенең ваҡай тормошон күрә алмай.* Ж. Кейекбаев.

**2.** *диал.* Ваҡсыл.

**3.** *диал. ҡар.* **бөтмөр** 1.

**ВАҠАЙЛАНЫУ** *ҡ. диал.* Ваҡсылланыу.

**ВАҠАЙЛАУ** *ҡ. диал.* Ентекләү. *Ваҡайлап эшләү.*

**ВАҠАР** [*ғәр.*] *и. иҫк.* Ҡиәфәттәге ғорурлыҡ, олпатлыҡ. *Мөхәррир Камали һөйләүселәргә бик ваҡар менән генә ҡарай.* А. Таһиров.

**ВАҠАРЛЫ** *с. иҫк.* Ғорур, олпатлы. *Сәхнәгә боронғо башҡорт кейеме кейеп, бик ваҡарлы, һалмаҡ хәрәкәт менән .. Фәйзи Ғәскәров килеп сыҡты.* «Совет Башҡортостаны», 1967, 17 март.

**ВАҠИҒ** [*ғәр.*] *с. иҫк.* Барлыҡҡа килгән, бар булған.

□ **Ваҡиғ булыу** барлыҡҡа килеү. *Башҡорттарҙың беренсе мәртәбә баш ҡутәреүҙәре* 1584 *йылда ваҡиғ булды.* М. Һаҙыев.

**ВАҠИҒА** [*ғәр.*] *и.* Булып үткән иҫтәлекле эш-хәл. *Күптән булған ваҡиға.* ■ *Зөләйхә туташ менән тәүге танышыу ваҡиғаһы ҡылт итеп иҫкә килеп төштө.* Т. Йәнәби.

**ВАҠИҒАЛА** *р.* Ғәмәлдә. *Ғимай .. әллә ни тиклем һүҙҙәргә етергә, ыҙғышырға тура килер тип уйлағайны. Ә ваҡиғала уйлағандан күп еңел булып сыҡты.* И. Насыри.

**ВАҠИҒАН** [*ғәр.*] *р. иҫк.* Ысынлап та. *Ваҡиған,— ти учитель Хажи ағай, шәкерт сығып киткәс,— беҙ шәкерттәребеҙгә юҡ гәйептәрҙе тағырға тырышабыҙ булһа кәрәк.* Ғ. Ғүмәр.

**ВАҠИҒДА** *р. иҫк.* Ваҡиғала.

**ВАҠИФ** [*ғәр.*] *и. иҫк.* Ваҡыф биреүсе.

**ВАҠЛАНЫУ** *ҡ.* **1.** *төш. ҡар.* **ваҡлау.** *Ваҡланған таш.* ■ *Зәлифә урынынан торҙо ла, ваҡланып туҫтаҡҡа ебетергә ултыртылған ҡоротон ҡалаҡ менән иҙә һалды ла, ҡаҙандағы һурпаны ҡоротлап, ҙур һурпа алдырына һалып өләшеп сыҡты.* Т. Хәйбуллин.

**2.** *ҡар.* **вағайыу.**

**3.** *кусм.* Маҡсат, мәнфәғәт йәһәтенән бәләкәйләнеү; түбәнәйеү. *Ауылдың батыры, даны булған Фәхри ниндәй ваҡланған.* Б. Бикбай.

**4.** *кусм.* Ваҡсыллыҡ күрһәтеү, ваҡсыл булыу. *Эй, ҡорҙашым! Төҫмө ир-егеткә сәбәләнеп юҡҡа ваҡланыу?* Р. Бикбаев.

**ВАҠЛАТЫУ** *ҡ. йөкм. ҡар.* **ваҡлау.**

**ВАҠЛАУ** *ҡ.* **1.** Ваҡ-ваҡ киҫәктәргә, өлөштәргә бүлгеләү; ваҡ итеү. *Икмәкте ваҡлау. Ташты ваҡлау.*

**2.** Бәләкәй-бәләкәй төркөмдәргә, шәхестәргә айырыу. *Крәҫтиән хужалыҡтарын ваҡлау.*

**3.** Бәләкәй нәмәләргә иғтибар итеп, ниҙеңдер әһәмиәтен төшөрөү. *Мәсьәләне ваҡлау. Эште ваҡлау.*

**4.** Ҡиммәтен бәрәбәр итеп, ваҡҡа алмаштырыу (аҡсаны). *Аҡсаны ваҡлау. Ун һумлыҡты берәр һумлыҡҡа ваҡлау.*

◆ **Ваҡлап һатыу** берәмләп, өлөшләп һатыу.

**ВАҠЛАШЫУ** *ҡ.* Әһәмиәте бәләкәй нәмәгә бәйләнеү; ваҡсылланыу. *[Таһыл:] Ташлайыҡ әле ундай һүҙҙе! Улайтып ваҡлашыу яҡшы түгел бейҙең алдында. Һырға һабағы ҡыҙ атаһына бирелгәнгә мин һиңә толпар менән шоңҡар һалдым бит.* Х. Ғәбитов.

**ВАҠЛЫҠ** *и.* **1.** Йөкмәткеһе, әһәмиәте бәләкәй нәмә. *Тормош ваҡлыҡтары.* ■ *[Хатта] бөтә әхүәл ваҡлыҡтарына тиклем тасуир ителгән, етмәһә, теге Тимашов тураһында ла яҙылған.* Д. Юлтый.

**2.** *кусм.* Маҡсат, мәнфәғәттең бәләкәйлеге, түбәнлеге. *Ваҡлыҡты, түбәнлекте белмәй үҫкән саф һәм ғорур йөрәкле [Зөлхизә] үҙен-үҙе онотоп, ярһып һөйә.* З. Биишева.

**ВАҠ-СЫБЫР** *с. йыйн.* Ваҡ-ваҡ, бәләкәй-бәләкәй. *Ваҡ-сыбыр балыҡ. Ваҡ-сыбыр мал.*

**ВАҠСЫЛ** *с.* Кәрәкмәгән ваҡ нәмәләргә лә иғтибар итеүсән; ваҡ һүҙле. *Ваҡсыл кеше. Ваҡсыл булыу.*

● *Ваҡсыл кеше түрә булһа, ағас игәү түрҙә булыр.* Мәҡәл.

**ВАҠСЫЛЛАНЫУ** *ҡ.* Ваҡ-төйәк бәләкәй нәмәгә бәйләнеү; ваҡлашыу. *Артыҡ ныҡ ваҡсылланып юҡ-барға иғтибар итеү.*

**ВАҠСЫУ** *с. диал.* Ваҡсыл.

**ВАҠ-ТӨЙӘК** *и. йыйн.* **1.** Күләме яғынан сағыштырмаса бәләкәй бөтә кәрәк-яраҡ (һауытһаба, энә-еп һ. б.). *Донъя вак-төйәге.//Вак-төйәк нәмә. Вак-төйәк кейем.* ■ *Таш өҫтөндә туҫтаҡ, сәйгүн, котелок һәм башка вак-төйәк күренә.* Ш. Насыров.

**2.** *күсм.* Әһәмиәте бәләкәй булған эш-хәл.// *Вак-төйәк йомош. Вак-төйәк мәсьәлә. Вак-төйәк эш.* ■ *[Юлдыбикә әбей:] Картым бахыр, йомошфәлән бирһәң, ниңә бирәһең, кунак сакырһаң, ниңә сакыраһың, тип, кеше һымак, вак-төйәкте күреп тә барманы.* Т. Хәйбуллин.

**ВАҠҺЫНЫУ** *к.* **1.** Үҙеңде бәләкәйгә ҡуйыу, ваҡҡа һанау. *Беҙ кескәй, тип һис касан да вакһынмагыҙ.* Ғ. Рамазанов.

**2.** *кар.* **ваҡлашыу.** *Ваклыгы менән йыһандың вакһынаһым килмәне.* Ш. Бабич.

**ВАҠҺЫУ** [1] *с. диал.* Ваҡсыл. *Вакһыу кеше.*

**ВАҠҺЫУ** [2] *к. кар.* **ваҡсылланыу.**

**ВАҠЫТ** [*гәр.*] *и.* **1.** Быуат, йыл, сәғәт, минут һ. б. менән иҫәпләнгән дауамлы арауыҡ һәм уларҙың бер-бер артлы алмашыныуы. *Дүрт ай вакыт. Вакыт тиҙ үтә.* ■ *[Зөлхизәгә] хәҙер ун һигеҙ!.. Күпме вакыт үтеп киткән!* З. Биишева./Шул арауыҡты үлсәү берәмеге. *Урындагы вакыт. Кояш вакыты. Мәскәү вакыты.*

**2.** Ай, көн, тәүлек араһындағы бер өҙөк. *Шул вакыт. Вакыт үткәреү. Вакыт әрәм итеү. Вакыт биреү. Кыҫка вакыт эсендә.*/Ай, тәүлек, көндөң нимәгәлер бәйле сағы. *Бала вакыт. Бесән вакыты. Иртәнге аш вакыты. Йоклар вакыт. Эш вакыты. Ял вакыты.* ■ *Күңел яна, көйә ут эсендә йәш вакыттар әрәм үткәнгә.* Ш. Бабич./Тәүлек, миҙгел дауамындағы айырым бер өҙөк; мәл. *Киске вакыт. Кышкы вакыт. Ямгырлы вакыт.* ■ *Таң вакыты .. Килеп торҙом бейек яр буйына, гашикланып карап таң нурына.* Ғ. Амантай.

**3.** Берәй нәмә эшләр өсөн мөмкинлек биргән уңайлы мәл; форсат. *Вакытын белеү. Вакытын табыу. Вакыт юк.* ■ *[Рәшиҙә — Тәнзилә әбейгә:] Әйҙә, беҙ кайта торайык, йәштәр үҙ вакыттары менән кайтырҙар әле.* М. Тажи.

**4.** Кешелек йәмғиәтендәге, ниндәйҙер дәүләт, халыҡ һ. б. нәмә тормошондағы билдәле бер осор; заман. *Революция вакыты. Һугыш вакыты.*

**5.** *грам.* Эш-хәлдең дауамлы арауыҡтағы бер өҙөккә ҡарағанын белдергән грамматик төшөнсә. *Вакыт хәле. Вакыт һөйләм.*

**6.** *филос.* Материя булмышының хәрәкәттә, дауамлылыҡта, эҙмә-эҙлелектә сағылған дөйөм объектив формаһы.

◆ **Бер ваҡыт** билдәле бер мәлдә; бер саҡ, бер заман. *Бер вакыт бөтәһен дә атып бәреп, үҙебеҙҙең Иҫәнголга кайтып китергә самаланым.* С. Агиш. **Бер ваҡытта ла** *йәки* **һис бер ваҡыт** һис ҡасан да. *Беҙ бер вакытта ла баш эймәнек.* **Ҡайһы [бер] ваҡытта** ҡайһы берҙә, ара-тирә; ҡайһы [бер] саҡта. *Кайһы вакыт бала саҡтар иҫкә килеп төшә.* **Һәр ваҡыт** гел генә, һәр саҡ. *Был илдә һәр вакыт якты, был илдә һәр вакыт ал таң.* Р. Ниғмәти.

**ВАҠЫТ-ВАҠЫТ** *р.* Ҡайһы берҙә, ара-тирә. *Вакыт-вакыт ел иҫеп китә.*

**ВАҠЫТЛЫ** *с.* **1.** Оҙаҡҡа иҫәпләнелмәгән, ваҡытлыса ғына булған. *Вакытлы ярашыу.* ■ *Фронтта вакытлы тынлык.* А. Карнай.

**2.** Билдәле бер ваҡытҡа тәғәйенләнгән. *Вакытлы хөкүмәт. Вакытлы эш.* **Ваҡытлы матбуғат** билдәле бер ваҡыттан һуң ҡабатланып сыға торған газета һәм журналдар.

**3.** Уңайлы, кәрәк ваҡытҡа тура килгән. *Вакытлы сара. Был карар бик вакытлы булды.// Вакытлы йөрөйһөң. Вакытлы килгәнһең.*

**ВАҠЫТЛЫ-ВАҠЫТҺЫҘ** *р.* Кәрәккән-кәрәкмәгән ваҡытта. *Вакытлы-вакытһыҙ кунак сакырыу.*

**ВАҠЫТЛЫСА** *р.* Билдәле бер ваҡыт менән сикләнеп. *Вакытлыса эшләү.* ■ *Ямаевтың үҙ квартираһы ла юк, кешеләрҙә вакытлыса тороп йөрөй.* Б. Бикбай.

**ВАҠЫТҺЫҘ** *с.* **1.** Ваҡытынан элек булған; иртә. *Вакытһыҙ үлем.//Вакытһыҙ һәләк булыу.*

**2.** Тейешһеҙ, уңайһыҙ ваҡытта булған. *Вакытһыҙ кунак. Вакытһыҙ йыйылыш.//Вакытһыҙ йөрөү.*

**ВАҠЫТЫНДА** *р.* **1.** Тейешле, кәрәкле ваҡытта. *Вакытында урылган иген.*

**2.** Ҡасандыр бер ваҡытта; заманында, элек. *Вакытында ул дан тоткан көрәшсе ине.*

**ВАҠЫФ** [*гәр.*] *и. иҫк.* Йәмәғәт файҙаһына васыят ителгән мөлкәт.

□ **Ваҡыф итеү** васыят итеү. *Берәү бөтә байлыгын уларга [шәкерттәргә] вакыф итеп вафат булган.* Ғ. Ғүмәр.

**ВАЛ** [1] [*рус.*] *и.* Тупраҡ, балсыҡтан йәки башҡа нәмәнән өйөп яһалған нығытма; ур. *Крепость валы.* ■ *Фашистар буйҙан-буйга кар катыш һалам өйөп, уның өҫтөнә һыу һиптереп, бейек вал яһагандар.* Ж. Кейекбаев.

**ВАЛ** [2] [*рус.*] *и. тех.* Төрлө механизмдарҙа: хәрәкәтте башҡа өлөштәргә бирә торған әйләнмәле үҙәк, күсәр. *Кардан валы. Кәкре вал. Станок валы.*

**ВАЛЕНТЛЫ** *с. хим.* Үҙ атомы һанындағы башҡа химик элемент атомдары менән ҡушылырға һәләтле. *Ике валентлы. Күп валентлы.*

**ВАЛЕНТЛЫҠ** *и. хим.* Атомдың билдәле бер һандағы икенсе атомдар менән берләшеү һәләте.

**ВАЛЕРИАН** [*рус.* валериана ⟨*лат.*] *и.* **1.** Болонда үҫә торған алһыу сатыр сәскәле дарыу үләне; бесәй үләне. *Валериан тамыры. Валериан сәскәһе.*

**2.** Шул үләндең тамырынан яһалған дарыу. *Валериан тамсылары.*

**ВАЛЕ́Т** [*рус.* ⟨ *фр.*] *и.* Һүрәтле кәрттәрҙең иң бәләкәйе.

**ВАЛИДО́Л** [*рус.* ⟨*лат.*] *и. фарм.* Йөрәк ҡыҫҡанда эсә торған тынысландырғыс дарыу.

**ВА́ЛИК** [*рус.*] *и. тех.* Бәләкәй вал [2].

**ВАЛЛАҺИ** [*гәр.*], **валлаһи ғәзим** *ымл.* Кеше ышанмағанда, бик ышандырырға тырышып әйтелә.— *Йәшенле ямгырҙа кырҙа йөрөһәң, сәс йәшен юлы һымак оҙон булып үҫә. Валлаһи гәзим!* К. Кинйәбулатова. *Дуҫ итеп кенә йөрөйөм, валлаһи, йәрем түгел* (Халыҡ йырынан).

**ВАЛОВО́Й** [*рус.*] *с. кар.* **тулайым.**

**ВАЛСЫҠ** *и.* Берәй нәмәнең бик ваҡ, бик бәләкәй киҫәге. *Икмәк валсығы.* ■ *Ғәзиз ерем, һәр валсығың өсөн, мин бирергә әҙер йәнемде.* Х. Түләкәев.

**ВАЛСЫҠЛАНЫУ** *к.* Валсыҡҡа әйләнеү. *Икмәк иҫкергән, ыуалып валсыҡланып тора.*

**ВАЛСЫҠЛАУ** *к.* Валсыҡ хәләнә килтереп ваҡлау. *Икмәкте валсыҡлап бөтөрөү.*

**ВАЛТО́РНА** [*рус.* ⟨*нем.*] *и.* Дүңгәләкләп бөгөп яһаған еҙ торба рәүешендәге киң ауыҙлы, йомшаҡ, иркен тауышлы тынлы музыка ҡоралы.

**ВАЛУ́Н** [*рус.*] *и. шул уҡ* **һарыҡ таш** (*кар.* **таш** 2).

**ВАЛЬС** [*рус.* ⟨*фр.*] *и.* Өс ритмлы, һалмаҡ парлы бейеү һәм шул бейеүҙең көйө. *Вальс бейеү.* ■ *Ҡыҙҙарҙан берәү пианиноға барып: «Вальс уйнайым, бейегеҙ!» — тине.* Ғ. Хәйри.

**ВАЛЬЦО́ВКА** [*рус.* ⟨*нем.*] *и. тех.* Бер-береһенә ҡыҫталышып, ҡара-ҡаршы әйләнгән ике валлы машина. *Вальцовкала эшләү. Вальцовканан үткәреү.*

**ВАЛЬЦО́ВЩИК** [*рус.*] *и.* Вальцовкала эшләгән эшсе. *Вальцовщиктар валдар аша үтеп, һаман һуҙыла килгән металды .. туралап торалар.* „Совет Башҡортостаны“, 1968, 23 ғинуар.

**ВАЛЮ́ТА** [*рус.* ⟨*ит.*] *и.* **1.** Бер илдең аҡса системаһына нигеҙ булған берәмек.

**2.** Илдәге аҡса системаһының төрө. *Алтын валюта. Көмөш валюта.*

**3.** *йыйн.* Халыҡ-ара бәйләнеш иҫәп-хисабында йөрөгән сит ил аҡсалары һәм төрлө түләүгә, кредитҡа бәйле докумерттар.

♦ **Валюта курсы** төрлө валюталарҙың үҙ-ара нисбәте, бер илдәге аҡса берәмегенең башҡа илдәрҙәге аҡса берәмеге менән баһаланған ҡиммәте.

**ВАНА́ДИЙ** [*рус.* ⟨*лат.*] *и.* Химик элемент, буҙ төҫтәге ҡаты металл (юғары сортлы ҡорос ҡойғанда ҡулланыла).

**ВАНДА́Л** [*рус.* ⟨*лат.*] *и.* **1.** Рим империяһын һәм культураһын тар-мар иткән боронғо герман ҡәбиләһе.

**2.** *күсм.* Культура ҡомартҡыларын вәхшиҙәрсә вайран иткән кеше.

**ВАНДАЛИ́ЗМ** [*рус.*] *и.* Культура, сәнғәт ҡомартҡыларын вәхшиҙәрсә һәләк итеү, ҡыйратыу күренеше. *Тормош үҙе культураны .. вандализмдан яҡлау тураһындағы мәсьәләне ҡуя.* «Совет Башҡортостаны», 1986, 26 февраль.

**ВАНИЛИ́Н** [*рус.* ⟨*фр.*] *и.* Ваниль емешенән алынған хуш еҫле матдә (күберәк ҡамырға һалына).

**ВАНИ́ЛЬ** [*рус.* ⟨*фр.*] *и.* **1.** Нәҙек оҙон емешле тропик үҫемлек.

**2.** Шул үҫемлектең кулинария һәм парфюмерияла ҡулланыла торған хуш еҫле кипкән емеше.

**ВА́ННА** [*рус.* ⟨*нем.*] *и.* **1.** Йыуыу, йыуыныу йәки дауаланыу өсөн махсус эшләнгән оҙонса ҙур һауыт. *Эмалле ванна. Балалар ваннаһы. Ваннала йыуыныу.* ■ *Йәгфәр көн аралаш нервы ныҡыта торған ваннаға инә.* Ф. Иҫәнғолов./ Ошондай һауыт урынлаштырылған бүлмә. *Ванналы квартира./ махс.* Нимәнелер батырыу өсөн шыйыҡлыҡ һалынған һауыт. *Фотоплёнка ваннаһы.* ■ *Электролиз ванналарына тултырған аш тоҙо иретмәһә аша электр тоғы үткәргәндә, хлор анодҡа йыйыла.* „Совет Башҡортостаны“, 1965, 12 март.

**2.** Ҡояш нуры, һауа, һыу менән тәнде дауалау сараһы. *Ҡояш ваннаһы. Һауа ваннаһы. Аяҡҡа ванна яһау.*

**ВАРА́Н** [*рус.* ⟨*лат.*] *и.* Көньяҡта йәшәгән ҙур кеҫәртке төрө.

**ВА́РВАР** [*рус.* ⟨*гр.*] *и.* **1.** Боронғо гректарҙа һәм римляндарҙа: сит ил кешеһенә кәмһетеп әйтелгән һүҙ.

**2.** *кар.* **вәхши** 2.

**ВАРВАРИ́ЗМ** [*рус.* ⟨*гр.*] *и.* Сит телдән алынған һәм әҙәби тел нормаларын боҙған һүҙ йәки һүҙбәйләнеш.

**ВАРВАРЛЫҠ** *и. кар.* **вәхшилек** 2.

**ВАРЕ́НЬЕ** [*рус.*] *и.* Бал йәки шәкәрҙә ҡайнатҡан еләк-емеш. *Алма вареньеһы. Еләк вареньеһы. Сейә вареньеһы. Варенье ҡайнатыу.* ■ *Тәҙрә янындағы быялалы өлкән шкафта төрлө вареньелар, төрлө банкалар, бал һалынған һауыттар, тағы әллә ниҙәр теҙелешеп ултыралар.* Һ. Дәүләтшина.

**ВАРИА́НТ** [*рус.* ⟨*лат.*] *и.* Төрлөсә үҙгәртеп эшләнгән йәки бирелгән нәмәнең береһе. *Менделеев периодик система таблицаһының иң һуңғы вариантын төшөндә күргән.* «Совет Башҡортостаны», 1971, 10 ғинуар. *Бабич «Ғазазил»дың ҙурайтып ҡайтанан эшләгән вариантын һөйләне.* С. Ҡудаш.

**ВАРИА́ЦИЯ** [*рус.* ⟨*лат.*] *и. муз.* Төп теманы ҡабатлау һәм төрлөсә үҙгәртеү нигеҙендә эшләнгән музыкаль әҫәр, бейеү һ. б. *[Композиторҙың] «Сыңрау торна» темаһына фортепиано өсөн яҙылған .. вариацияһы уңышлы.* «Ағиҙел», 1966, № 7.

**ВАРИҪ** [*ғәр.*] *и.* **1.** Мираҫ алған кеше. *Вариҫһыҙ мөлкәт.*

**2.** *күсм.* Кемдеңдер эшен дауам итеүсе. *Өлкән быуындың лайыҡлы вариҫы булыуҙы бөгөнгө йәш быуын мөҡәддәс бурыс итеп иҫәпләй.* «Совет Башҡортостаны», 1966, 18 ноябрь.

**3.** (*баш хәреф менән*) Ир-ат исеме.

**ВАРЯ́Г** [*рус.*] *и.* Көнсығыш һәм көнбайыш Европаға 9—10 быуаттар ҙа һөжүм иткән нормандарға боронғо рустар тарафынан бирелгән исем.

**ВАСИ** [*ғәр.*] *и. иҫк.* Опекун.

**ВАСИЛ** [*ғәр.*] *с. иҫк. кит.* Ирешкән, өлгәшкән.

□ **Васил булыу** ирешеү, өлгәшеү. *Берәүгә донъя бәхете хасил булһа, моратҡа һауаһынса васил булһа, нәфсеһе фирғәүендәй дәгүә ҡылыр.* Аҡмулла.

**ВАСИТА** [*ғәр.*] *и. иҫк.* **1.** Эштең әмәле, юлы.

**2.** *кар.* **васитасы.** *[Насар] кешеләрҙән өмөт аҙ! Уны васита ҡылма хөрмәтле тип.* М. Ғафури.

**ВАСИТАСЫ** *и. иҫк.* Аралашсы. *Ауылда һатыусылар синыфы ла барлыҡҡа килә. Былар башта ике ғруһ халыҡ араһында васитасы ғына булып йөрөйҙәр.* Ғ. Фәхретдинов.

**ВАСИФ** [*ғәр.*] *и. иҫк. кит.* Ниҙеңдер тасуирлап яҙылышы.

□ **Васиф ҡылыу** тасуирлап яҙыу. *Васиф ҡылғыһыҙ михнәттәр күрҙем.* «Батыршаның хаты».

**ВАССА́Л** [*рус.* ⟨*фр.*] *и.* **1.** Урта быуаттағы Көнбайыш Европала ер биләүсе эре феодалға бойондороҡло ваҡ феодал.

**2.** *күсм.* Бойондороҡло ил йәки кеше. *Нуғай хандарының һәм мырҙаларының вассалдары булып иҫәпләнгән башҡорт феодалдары үҙ хужаларының талаптары буйынса һуғышҡа ҡоралды һуғышсылар бирергә тейеш була.* Р. Ҡузыев, Б. Юлдашбаев.

**ВАСЫЯТ** [*ғәр.*] *и.* **1.** Үлер алдынан белдерелгән теләк, үтенес. *Васыят әйтеү. Васыят яҙыу.* ■ *[Мисбах — Гәрәйгә:] Мин үләм, улым .. Васыятым шул һиңә: донъяны ҡулыңда нык тот.* Б. Бикбай.

**2.** *юғары* Киләсәк быуынға, уҡыусыларына, эште дауам итеүселәргә әйтеп ҡалдырылған һүҙ, кәңәш, теләк һ. б. *Ата-бабалар васыяты.* ■ *Муса Йәлилдең Моабит дәфтәре беҙгә өлкән быуындың изге васыяты ул.* Ғ. Рамазанов.

□ **Васыят итеү** 1) үлер алдынан ниндәйҙер теләк белдереү. *Үлһәм дә, үҙ илемдә үләм, үҙ еремә күмеләм, тигән ул [Өмөтбай], өс улына ла шуны васыят иткән.* З. Биишева; 2) үлер алдынан бер кешегә ниҙелер исемләп ҡалдырыу. *Олатайым фидиәһен .. балалыҡ дуҫы бер ҡартҡа васыят иткән.* Б. Бикбай.

**ВАСЫЯТНАМӘ** [*ғәр.* ⟨*фарс.*] *и.* Васыят яҙылған ҡағыҙ. *Васыятнамә төҙөү. Васыятнамә ҡалдырыу.*

**ВАТАН** [*ғәр.*] *и.* Тыуып үҫкән ата ере; тыуған ил. *Ватан тупрағы. Ватанды һаҡлау.* ■ *Ватан ул, ҡыҙым, тыуған ил, бына беҙ торған урын. Был ерҙә ғүмер кисергән ата-бабайҙар борон.* Р. Ниғмәти.

◆ **Ватан һуғышы** илбаҫарҙарға ҡаршы күтәрелгән бөтә ил һуғышы.

**ВАТАНДАШ** *и.* Бер илдә тыуып үҫкән һәм йәшәгән кешеләр. *Бар нәмәлә эшем бар. .. Ватандашым ҡайғырһа ла, шатланһа ла эшем бар.* М. Кәримов.

**ВАТАНСЫ** *и.* Үҙ ватанын һөйөп, фиҙаҡәр хеҙмәт иткән кеше; илһөйәр. *Сикһеҙ ватансы мин, совет иле булыу шарты менән ул ватан.* М. Ғафури.

**ВАТЕРПА́С** [*рус.* ⟨*гол.*] *и.* Ғоризонталь тигеҙлекте тикшерә торған ябай прибор.

**ВАТИ́Н** [*рус.*] *и.* Йөнтәҫләнеп торған һирәк кенә бәйләм туҡыма (кейем эсенә мамыҡ урынына ҡуйыла). *Йөн ватин. Ватинлы пальто.*

**ВА́ТМАН** [*рус.* ⟨*ингл.*] *и.* Чертёж һыҙыу, һүрәт төшөрөү өсөн ҡулланылған яҡшы сифатлы ҡалын ҡағыҙ.

**ВАТТ** [*рус.* ⟨*ингл.*] *и.* Электр тогы ҡеүәтен үлсәү берәмеге. *Йөҙ ватлы лампа.*

**ВАТТМЕ́ТР** [*рус.* ⟨*ингл.*] *и.* Электр тогының ҡеүәтен ватт менән үлсәй торған прибор.

**ВАТТЫРЫУ** *к. йөкм. кар.* **ватыу** 1—3,5. *Таш ваттырыу.*

**ВАТЫҠ** *с.* **1.** Ватылған, ярыҡ. *Ватыҡ йомортҡа. Ватыҡ көҙгө. Ватыҡ сүлмәк. Ватыҡ сынаяҡ.* ■ *Тәҙрәләрҙә быяла заты күрмәҫһең. Барыһы ла ватыҡ, унан ел гөжләп тора.* Т. Хәйбуллин.

**2.** Төҙөк булмаған, ватылған; боҙоҡ. *Ватыҡ ҡапҡа. Ватыҡ йоҙаҡ.*

**3.** *и. мәғ.* Ватылған нәмәнең киҫәге; ярсыҡ. *Быяла ватығы. Көршәк ватығы.*

**ВАТЫЛЫУ** *к.* **1.** *төш. кар.* **ватыу.** *Ватылған таш.*

**2.** Сатнап, сайрап бөтөнлөктө юғалтыу; ярылыу. *Боҙ ватылды. Быяла ватылды. Йомортҡа ватылды. Стакан ватылды.* ■ *Көршәк ялп итеп ергә осоп төшә лә, ватыла.* З. Биишева. *Ватылды тәҙрә шырт итеп, шырт ҡына түгел шул — ул бит ҡыйрай сылтырт итеп.* Ш. Бабич.

**3.** *диал. кар.* **боҙолоу** 1. *Ватылған арба.*

**4.** *диал. күсм.* Ҡаҡшау, ҡыйралыу. *Тән ватылған.*

**ВАТЫП-ЕМЕРЕҮ** *к.* **1.** Пыран-заран килтереү, ҡыйратыу. *Ҡаралтыны ватып-емереп бөтөрөү.*

**2.** *күсм.* Нык боҙоу (телде, һүҙҙе). *Вата-емерә тәржемә итеү. Ватып-емереп һөйләшеү.* ■ *Ҡыҙ вата-емерә булһа ла үҙ телендә бер аҙ һупалай ине.* Д. Исламов. *Ирҙәре дуҫтар булған кеүек, улар ҙа гәжәп татыуҙар. Ул [Нина] ярты башҡортсалап, Мәғфиә ярты руссалап, вата-емерә булһа ла, уртаҡ тел табалар, һөйләшеп һүҙҙәре бөтмәй.* Б. Бикбай.

**ВАТЫП-ҠЫРЫУ** *к. кар.* **ватып-емереү.** *Һауыт-һабаны ватып-ҡырып бөтөү. Ватып-ҡырып һөйләү.*

**ВАТЫП-ҺЫНДЫРЫУ** *к. кар.* **ватып-емереү** 2.

**ВАТЫУ** *к.* **1.** Сатнатып, сайратып, бөтөнлөгөн бөтөрөү; ярыу. *Сынаяҡты ватыу. Бәреп ватыу. Төшөрөп ватыу. Һуғып ватыу.* ■ *Асыҡ ишектән кәзә кергән дә, үҙен көҙгөлә күреп, көҙгөнө төкөп ватҡан.* Б. Бикбай./*диал.* Ярыу. *Утын ватыу. Шәкәр ватыу.*

**2.** Аҡтарып, соҡоп алыу; ҡаҙыу. *Таш ватҡан урын.* ■ *Шахтер егет .. йырлап күмер ватҡанда талмай беләге, ярһый йөрәге.* Н. Иҙелбай.

**3.** Яраҡһыҙ хәлгә килтереү, боҙоу. *Машинаны ватыу.*

**4.** *диал. күсм.* Ҡаҡшатыу, ҡыйралдырыу. *Ауыр эш тәнде вата.*

**5.** *диал. күсм.* Туҡмау, бешеү.

◆ **Баш ватыу** ниҙелер аңларға, хәл итергә тырышып бик нык уйлау. *Алтын приискаһындағы төнгө вакиғаның сәбәбенә төшөнөргә теләгән Хисмәтулла төрлөсә баш ватты.* Я. Хамматов.

● *Себен тулап тәҙрә ватмаҫ.* Мәҡәл.

**ВАУ-ВАУ, вау ҙа вау** *окш.* Эт өргән тауышты белдергән һүҙ. *Сыйыырҙарын һөйрәп йөрөп, вау ҙа вау өрә Аҡбай.* Ғ. Дәүләтов.

**ВАФА** [*ғәр.*] *иҫк. и.* **1.** Тоғролоҡ, ышаныс. *Яҡын барма, вафа юҡтыр уларҙа (ҡатын-ҡыҙҙа), вафалыҡ дәғүәһен күп ҡылһа ла.* М. Ғафури. *Был донъяҡайҙарҙың вафаһы юҡ, үйнап та ғына көлөп ҡалайыҡ* (Халыҡ йырынан).

**2.** (*баш хәреф менән*) Ир-ат исеме.

□ **Вафа итеү** (*йәки* **ҡылыу**) тоғролоҡ күрһәтеү. *Иҫән булһаҡ, ғүмер вафа итһә, бер әйләнеп бәлки ҡайтырбыҙ.* Ғ. Ғүмәр.

**ВАФАТ** [*ғәр.*] *и. юғары* Үлем. *Хат килмәүкәйенә сәбәп икән бисаракайымдың вафаты* (Халыҡ йырынан).

□ **Вафат булыу** үлеү. *Төндә Имәнтауҙан Йомағужа карттың киҫәк кенә вафат булыуы тараһында хәбәр иттеләр.* Ә. Вәли.

**ВАФАҺЫҘ** *с. иҫк.* Тоғролоҡһоҙ, ышанысһыҙ. *Вафаһыҙ фани донъя.*

**ВАФИ** [*ғәр.*] *с. иҫк.* **1.** Һүҙенә тоғро, ышанысл ы

**2.** (*баш хәреф менән*) Ир-ат исеме.

**ВА́ФЛЯ** [*рус.* ⟨*нем.*] *и.* Кәрәҙ һымаҡ быжыртмаҡ итеп эшләнгән ҡатлы-ҡатлы печенье.

**ВА́ХМИСТР** [*рус.* ⟨*нем.*] *и.* Революцияға тиклемге Россияла атлы ғәскәрҙә һалдатҡа бирелгән иң юғары дәрәжә һәм шул дәрәжәләге кеше.

**ВА́ХТА** [*рус.* ⟨*гол.*] *и.* **1.** Карап, судноны төрлө хәүеф-хәтәрҙәрҙән һаҡлау маҡсатында тейешле урынға билдәләнгән дежурлыҡ. *Вахтаға ҡуйыу. Вахтала тороу.* / Эш барышы туҡталмай торған эштәрҙә (*мәҫ.* нефть сығарыу эшендә) алмашлап башҡарыла торған сәғәтле эш. *Вахтаға сығыу. Смена вахтаһын тапшырҙы.*

**2.** Карап экипажының йәки нефть промыслоһындағы бригаданың эш эшләгән, дежурлыҡ иткән төркөмө. *Эшкә ике вахта сыҡты.* / Айырым төркөм эшләгән йәки дежурлыҡ иткән ваҡыт арауығы. *Төнгө вахта.*

**3.** Тантаналы бер көнгә арнап башҡарылған эш. *Хеҙмәт вахтаһы. Вахтаға баҫыу.*

**ВАХТЁР** [*рус.* ⟨*нем.*] *и.* Учреждениелағы ҡарауылсы; дежур ҡарауылсы.

**ВАҺАЙ** *ымл.* Көй күтәргәндә әйтеләэ; вай-вай.

**ВАҺИП** [*ғәр.*] *с. иҫк.* **1.** Бүләк биреүсе.

**2.** (*баш хәрәф менән*) Ир-ат исеме.

**ВА́ШГЕРД** [*рус.* ⟨*нем.*] *и. тех.* Алтын ҡомо йыуа торған иңкеү улаҡ.

**ВЕГЕТАРИАН** [*рус.* вегетарианец ⟨*ингл.*] *и.* Йәшелсә һәм һөт аҙыҡтары менән генә туҡланып, ит ашамаған кеше.

**ВЕГЕТАРИАНЛЫҠ** *и.* Йәшелсә һәм һөт аҙығы менән генә туҡланыу тәртибе.

**ВЕГЕТАТИВ** [*рус.* вегетативный] *с. биол.* Үҫемлек һәм хайуандарҙы туҡландырыуға мөнәсәбәтле. **Вегетатив ағзалар** үҫемлекте туҡландырып үҫтергән ағзалар (тамыр, һабаҡ, япраҡ).

♦ **Вегетатив нервы системаһы** *физиол.* организмда матдәләр алмашыныуына, кан йөрөшөнә эске ағзалар эшенә туранан-тура ҡатнашҡан нервылар. **Вегетатив юл менән үрсеү** *биол.* енси юлдан башҡа, ботаҡ йәки тамырҙар ярҙамында үрсеү.

**ВЕГЕТА́ЦИЯ** [*рус.* ⟨*лат.*] *и. бот.* Үҫемлектең шытып, үҫеп орлоҡланыуы. *Ҡыяр, помидор бер йәйҙә үк өлгөрөп орлоҡ бирһә, аш сөгөлдөрө менән кишерҙең вегетация осоро ике йылға, һуғандыҡы өс йылға һуҙыла.* «Совет Башҡортостаны», 1965, 30 май.

**ВЕ́ДОМСТВО** [*рус.*] *и.* Хөкүмәт идаралығының бер тармағы һәм шуға ҡараған ойошмалар. *Тимер юл ведомствоһы. Хәрби ведомство.*

**ВЕ́ДОМОСТЬ** [*рус.*] *и.* **1.** Иҫәп-хисапҡа бәйле фактик мәғлүмәттәр исемлеге һәм улар тураһындағы белешмә. *Расчёт ведомосы.* ▪ *Кассир эргәһенә байтаҡ кеше йыйылған. Берәүһе ведомосҡа ҡул ҡуя, икенсеһе алған аҡсаһын һанай.* «Совет Башҡортостаны», 1966, 1 март.

**2.** *күпл.* Ҡайһы бер ваҡытлы матбуғат атамаһы эсендә килә; хәбәрҙәр. *СССР Верховный Советы ведомостары.*

**ВЕ́ЕР** [*рус.*] *и. кар.* **елпеүес** [1] 1.

**ВЕЗДЕХО́Д** [*рус.*] *и.* Юлһыҙ ерҙәрҙән йөрөрлөк автомобиль. *Ике вездеход Кәмәтауҙың иң бейек түбәһенә менеп, Сейәлек моронона килеп туҡтаны.* И. Ғиззәтуллин.

**ВЕ́КСЕЛЬ** [*рус.* ⟨*нем.*] *и.* Алған аҡсаның тейешле ваҡытта түләнәсәген күрһәткән йөкләмә ҡағыҙы. *Вексель буйынса түләү. Вексель менән талап итеү.*

**ВЕ́КТОР** [*рус.* ⟨*лат.*] *и. мат.* Тура һыҙыҡтың бер өлөшө менән күрһәтелгән, һан менән билдәләнгән һәм айырым йүнәлештәге математик дәүмәл.

**ВЕЛОДРО́М** [*рус.* ⟨*гр.*] *и.* Велосипедта ярышыу һәм күнекмә үткәреү өсөн махсус эшләнгән ҡоролма.

**ВЕЛОСИПЕ́Д** [*рус.* ⟨*фр.*] *и.* Аяҡтар ярҙамында хәрәкәткә килтерелә торған ике йәки өс тәгәрмәсле машина. *Балалар велосипеды. Ярыш велосипеды. Велосипед камераһы. Велосипед педале. Велосипед менән йөрөү.*

**ВЕЛЬВЕ́Т** [*рус.* ⟨*ингл.*] *и.* Һырлы-һырлы йөнтәҫ итеп һуғылған кизе-мамыҡ туҡыма. *Ҡара вельвет.* // *Вельвет куртка. Вельвет күлдәк. Вельвет салбар.*

**ВЕЛЬМО́ЖА** [*рус.*] *и. иҫк.* Бик юғары дәрәжәле, атаҡлы бай кеше.

**ВЕ́НА** [*рус.* ⟨*лат.*] *и.* Йөрәккә килгән ҡан тамыры; ҡара ҡан тамыры. *Аяҡ венаһының киңәйеүе. Вена ҡаны.*

**ВЕНГЕ́РКА** [*рус.*] *и.* Венгер халыҡ бейеүе нигеҙендә эшләнгән ҡушар бейеү һәм шул бейеүҙең көйө.

**ВЕНГР** *и.* Венгрияның төп халҡын тәшкил иткән милләт һәм шул милләттең бер кешеһе (уғыр-фин телдәренең береһендә һөйләшә). *Венгр теле. Венгр халҡы. Венгр ҡыҙы. Венгр бейеүе.* ▪ *Дунай йылғаһының үҙәндәрендә йәшәгән хәҙерге венгрҙар бик боронго замандарҙа Көньяҡ Уралда һәм Ағиҙел-Кама буйҙарында йәшәгән.* Ж. Кейекбаев.

**ВЕНГРСА** *р.* **1.** Венгр телендә. *Венгрса һөйләшеү.*

**2.** Венгр халҡына хас рәүештә. *Венгрса бейеү.*

**ВЕНЕ́РА** [*рус.* ⟨*лат.*] (*баш хәреф менән*) *и. астр.* Ҡояш системаһында Ҡояштан иҫәпләгәндә икенсе торған планета; Зөһрә, Сулпан.

**ВЕНЕ́РИК** [*рус.*] *и. һөйл.* Йоғошло енси ауырыу менән ауырыған кеше.

**ВЕНЕ́РИК: венерик ауырыу** йоғошло енси ауырыу (мәҫ. сифилис, гонорея). *Венерик ауырыулы кеше.*

**ВЕНЕРО́ЛОГ** [*рус.*] *и.* Венерик ауырыуҙарҙы дауалаған врач.

**ВЕНЕРОЛО́ГИЯ** [*рус.*] *и.* Медицинаның венерик ауырыуҙарҙы тикшерә торған бүлеге.

**ВЕ́НЗЕЛЬ** [*рус.* ⟨*пол.*] *и.* Исем-фамилияның йәки ике исемдең бергә сырмалтып, биҙәккә оҡшатып яһаған баш хәрефтәре.

**ВЕНО́К** [*рус.*] *и.* Түңәрәкләп үрелгән сәскә һәм япраҡтар бәйләме. *Лавр веногы. Ҡәбергә венок һалыу.*

**ВЕ́НСКИЙ** [*рус.*]: **венский мебель** *һөйл.* бөгөп эшләнгән еңел, ныҡ мебель (ултырғыс, өҫтәл һ. б.).

**ВЕ́НТИЛЬ** [*рус.* ⟨*нем.*] *и. тех.* Һыу, газ кеүек нәмәнең юлын асып-яба торған клапан. *Вентилде асыу.*

**ВЕНТИЛЯ́ТОР** [*рус.* ⟨*лат.*] *и.* Бүлмәне елләтеү өсөн ҡулланылған ҡулайлама, ҡорамал. *Ҙур тәҙрәнең иң югарғы өлгөһөнә ҡуйылған вентилятор, кочегаркалағы туҙанлы эҫе һауаны тартып, гөрөлдәп әйләнә.* Х. Туләкаев.

**ВЕНТИЛЯ́ЦИЯ** [*рус.* ⟨*лат.*] *и.* **1.** Бүлмәнең махсус ҡорамал ярҙамында елләтелеүе.

**2.** Шул маҡсатты үтәгән ҡулайлама йәки ҡулайламалар системаһы. *Вентиляция ҡуйыу.*

**ВЕРА́НДА** [*рус.* ⟨*португ.*] *и.* Өйҙө уратып йәки бер яҡ стенаһы буйлап эшләнгән ябыҡ балкон. *Верандалы өй.*

**ВЕРБА́ЛЬ** [*рус.* ⟨*лат.*]: **вербаль нота** *дип.* телдән әйтелгән белдереү менән бер дәрәжәлә йөрөгән, ҡул ҡуйылмаған нота.

**ВЕРБОВА́ТЬ** [*рус.* ⟨*нем.*]: **вербовать итеү** *ҡар.* **вербовкалау.**

**ВЕРБО́ВКА** [*рус.*] *и.* Кешеләрҙе берәй эшкә яллау, саҡырыу, ылыҡтырыу эше. *Вербовка үткәреү. Вербовка менән Камчаткаға китеү.*

**ВЕРБОВКАЛАНЫУ** *ҡ.* **1.** *ҡайт. ҡар.* **вербовкалау.** *Вербовкаланып китеү.*

**2.** *төш. ҡар.* **вербовкалау.** *Вербовкаланған эшселәр.*

**ВЕРБОВКАЛАУ** *ҡ.* Вербовка менән алыу, вербовка менән йыйыу. *Яңы төҙөлөшкә эшселәр вербовкалау.*

**ВЕРБО́ВЩИК** [*рус.*] *и.* Вербовка үткәргән кеше.

**ВЕРМИШЕ́ЛЬ** [*рус.* ⟨*ит.*] *и.* Фабрикала эшләнгән йомро нәҙек туҡмас. *Ашҡа вермишель һалыу. Вермишель бешереү.*

**ВЕРОНА́Л** [*рус.* ⟨*лат.*] *и. фарм.* Аҡ кристаллик онтаҡ рәүешендәге йоҡлатҡыс дарыу.

**ВЕ́РСИЯ** [*рус.* ⟨*фр.*] *и.* Бер хәл-ваҡиға хаҡында төрлөсә йөрөгән хәбәр йәки фараздың береһе. *Тәүге версия. Һуңғы версия.*

**ВЕРСТА́К** [*рус.*] *и.* Ағас йәки металл әйберҙе ҡулдан эшкәртеү өсөн ҡулайлаштырылған өҫтәл.

**ВЕРСТА́ТКА** [*рус.*] *и.* Хәрефте ҡул менән йыйғанда ҡулланылған ҡорал.

**ВЁРСТКА** [*рус.*] *и. типогр.* Версткалаған набор оттискыһы (хаталарҙы ҡарау, төҙәтеү өсөн алына). *Журнал вёрсткаһы. Вёрстканы уҡыу.*

**ВЕРСТКАЛАУ** *ҡ. типогр.* Наборҙы биттәргә һалыу. *Ул типографияла газета версткалай: машинала йыйылған гранкаларҙы урыны-урынына теҙә.* Н. Мусин.

**ВЕРТИКАЛЬ** [*рус.* вертикальный ⟨*лат.*] *с.* Тура төшкән, текә. *Вертикаль һыҙыҡ. Вертикаль рәүештә тотоу.*

**ВЕРТОЛЁТ** [*рус.*] *и.* Һауаға туп-тура күтәрелә һәм шул уҡ рәүештә ергә төшә торған осҡос.

**ВЕРТОЛЁТЧИК** [*рус.*] *и. һөйл.* Вертолёт йөрөтөүсе белгес.

**ВЕРФЬ** [*рус.* ⟨*гол.*] *и.* Карап эшләй һәм ремонтлай торған предприятие. *Карап ремонтлау верфы.*

**ВЕРХО́ВНЫЙ** [*рус.*] *с.* Ижтимағи йәһәттән өҫтөн торған; юғары.

◆ **СССР Верховный Советы** СССР-ҙа дәүләт власының юғары органы. **СССР Верховный суды** СССР-ҙа иң юғары суд органы.

**ВЕСТИБУЛЯР** [*рус.* вестибулярный ⟨*лат.*] *с.:* **вестибуляр аппарат** *анат.* эске ҡолаҡта урынлашҡан һәм кәүҙәнең пространствола дөрөҫ тотолошон тәьмин итеүсе ағза.

**ВЕСТИБЮ́ЛЬ** [*рус.* ⟨*фр.*] *и.* Ҙур биналарҙың алғы бүлмәһе. *Театр вестибюле.*

**ВЕТЕРА́Н** [*рус.* ⟨*лат.*] *и.* **1.** Өлкән йәштәге тәжрибәле һуғышсы. *Бөйөк Ватан һуғышы ветераны. Граждандар һуғышы ветераны.* ■ *Йылдар үтте .. Берлинды штурмлаған, Будапешты, Вена, Бухарест, Прага ҡалаларын азат иткән ветерандарҙың сәсенә сал керҙе.* «Совет Башҡортостаны», 1967, 9 май.

**2.** Берәй эштә, өлкәлә оҙаҡ йылдар эшләгән тәжрибәле кеше. *Колхоз ветераны. Хеҙмәт ветераны.*

**ВЕТЕРИНА́Р** [*рус.* ⟨*лат.*] *и.* Ветеринария буйынса белгес; мал врачы.

**ВЕТЕРИНА́РИЯ** [*рус.*] *и.* Хайуан, мал ауырыуҙарын һәм уларҙы дауалау юлдарын өйрәнә торған фәндәр системаһы. *Ветеринария институты.* / Малдарҙы дауалау эше. *Ветеринария амбулаторияһы. Район ветеринария пункты.*

**ВЕ́ТО** [*рус.* ⟨*ингл.*] *и.* Дәүләт хоҡуғында: сығарылған ҡарарҙың икенсе бер орган тарафынан тыйылыуы, законһыҙ тип табылыуы. *Вето һалыу.* / Халыҡ-ара хоҡуҡта: халыҡ-ара ойошмалағы берәй ағзаның ҡабул ителәсәк ҡарар менән килешмәүе, риза булмауы.

**ВЕТЧИНА́** [*рус.*] *и.* Сусҡаның тоҙлап ыҫлаған һум ите.

**ВЕ́ЧЕР** [*рус.*] *и. һөйл. ҡар.* **кисә** [2].

**ВЕ́ЯЛКА** [*рус.*] *и. ҡар.* **елгәргес.**

**ВЗВОД** [*рус.*] *и.* Рота, эскадрон һ. б. составындағы бәләкәй ғәскәри берәмек (йәйәүле ғәскәрҙә, атлы ғәскәрҙә, артиллерияла һ. б.). *Взвод командиры. Пулемёт взводы.*

**ВЗВО́ДНЫЙ** [*рус.*] *и. һөйл.* Взвод командиры. *Фельдфебель күп һөйләшеп торманы, взводныйҙарҙы саҡырып, беҙҙе взводтарға бүлде.* Ғ. Кәримов.

**ВЗНОС** [*рус.*] *и.* Ниҙер өсөн индерелгән аҡса. *Страховка взносы. Членлыҡ взносы. Профсоюз взносы. Взнос түләү.*

**ВЗЯ́ТКА** [*рус.*] *и.* Бирмә, ришүәт. *Взятка биреү. Взятка алыу.*

**ВИБРА́ТОР** [*рус.*] *и.* Дерелдәтеп һелкетә торған прибор, ҡулайлама. *Иҙелмә менән тулған ҡалыптар вибратор ярҙамында тығыҙлана ла, өҫтәре шымартыла.* «Совет Башҡортостаны», 1965, 18 апрель.

**ВИБРА́ЦИЯ** [*рус.* ⟨*лат.*] *и.* Һығылмалы есемдең дерелдәп һелкенеүе.

**ВИВА́РИЙ** [*рус.* ⟨*лат.*] *и. махс.* Өйрәнеү, тикшереү өсөн хайуандар тотоуға йәтешләнгән бина.

**ВИГО́НЬ** [*рус.* ⟨ *фр.*] *и.* **1.** Ламалар тоҡомона ҡараған йомшаҡ нәҙек йөнлө имеҙеүсе хайуан (Көньяҡ Америкала йәшәй).

**2.** Шул хайуандың йөнө һәм ошо йөндән һуғылған туҡыма. // *Вигонь кофта. Вигонь шарф.*

**3.** Йөн ҡатыш еп һәм шул ептән эшләнгән туҡыма. // *Вигонь одеял.*

**ВИДАҒ** [*ғәр.*]: **видағ итеү** (*йәки* **ҡылыу**) *иҫк. кит.* «хуш» тип әйтеү, хушлашыу. *Яҙмышымдың һуңын көтәмен дә, был донъяға видағ итәмен.* Х. Ғәбитов.

**ВИ́ЗА** [*рус.* ⟨*лат.*] *и.* **1.** Берәй илгә килеү, унан китеү йәки уның аша сығыуға рөхсәт биреп паспортҡа ҡуйылған билдә. *Виза алыу.*

**2.** Документтың тейешле кешегә күрһәтелгәнен, төп кенәгәгә теркәлгәнлеген белдергән билдә. *Ғаризаға виза һалыу.*

**ВИЗИ́Т** [*рус.* ⟨*фр.*] *и.* **1.** Кешенең рәсми рәүештә осрашыу өсөн кемгәлер барыуы. *Визит яһау.* ■ *СССР партия-хөкүмәт делегацияһы .. рәсми визит менән Польшала булды.* «Совет Башҡортостаны», 1965, 11 апрель.

**2.** Врачтың ауырыу кеше янына өйгә килеүе.

♦ **Визит карточкаһы** кешене таныҡтан ҡағыҙ (визит менән килгәндә алдан биреп индерелә).

**ВИЗУАЛЬ** [*рус.* визуальный ⟨*лат.*] *с. астр.* Ябай күҙ менән йәки ниндәйҙер оптик прибор ярҙамында ҡарауға нигеҙләнгән. *Айҙы визуаль юл менән өйрәнеү.*

**ВИ́КА** [*рус.*] *и. ҡар.* **кәрешкә.**

**ВИ́КИНГ** [*рус.*] *и.* Боронғо Скандинавияның диңгеҙ һуғышсыһы.

**ВИКТОРИ́НА** [*рус.*] *и.* Төрлө һорау һәм яуаптарҙан торған уйын. *Әҙәби викторина.*

**ВИКТО́РИЯ** [*рус.* ⟨ *лат.*] *и.* **1.** Баҡса үҫемлектәренең айырым бер сорты (мәҫ. еләк, сөгөлдөр һ. б.).

**2.** Томбойоҡтар ғаиләһенә ҡараған ҙур яҫы япраҡлы тропик үҫемлек.

**ВИЛАЙӘТ** [*ғәр.*] *и. иҫк.* Административ берәмек; өлкә. *Ырымбур вилайәте.*

**ВИЛДАН** [*ғәр.*] *и.* **1.** *иҫк. кит.* Бала, улан.

**2.** Дини хөрәфәт буйынса: ожмах хеҙмәтсеһе. *[Сабир мулла:] Йәннәттең дә рәте киткән, хур ҡыҙҙары аҙғандар.., гилмандар иҫерек, вилдандар аҡылдан шашҡан, кәүҫәр күлен бысратҡандар.* Б. Ишемғол.

**3.** (*баш хәреф менән*) Ир-ат исеме.

**ВИ́ЛЛА** [*рус.* ⟨*лат.*] *и.* Баҡса менән уратып алынған бай яңғыҙ йорт йәки дача.

**ВИНЕГРЕ́Т** [*рус.* ⟨*фр.*] *и.* Төрлө йәшелсәне турап, үҫемлек майы, һеркә ҡойоп ҡатнаштырған һалҡын ашамлыҡ. *Винегрет әҙерләү.*

**ВИНО́** [*рус.*] *и.* Күберәк йөҙөм һутынан әсетеп яһалған эсемлек. *Виноград виноһы. Емеш-еләк виноһы.* ■ *Дуҫтар менән йыйылып ултырҙыҡ, эстек Грузия виноһын.* М. Хәй.

**ВИНОГРА́Д** [*рус.*] *и. ҡар.* **йөҙөм.**

**ВИНТ** [*рус.*] *и.* **1.** Бороп нығытыу өсөн ос яғы һырлы сөй. *Винт менән нығытыу.*

**2.** Самолёт йәки карап двигателенең әйләнтмәге. *Самолёт винты. Пароход винты.*

**ВИНТЛАУ** *ҡ.* Винт (1 мәғ.) ҡуйыу. *Винтлап нығытып ҡуйыу.*

**ВИНТО́ВКА** [*рус.*] *и.* Көбәк эсе борма һыҙыҡлы мылтыҡ. *Бәләкәй калибрлы винтовка. Винтовка затворы.*

**ВИНЧЕ́СТЕР** [*рус.*] *и.* Һунар мылтығының бер төрө.

**ВИОЛОНЧЕЛИ́СТ** [*рус.*] *и.* Виолончелдә уйнаусы.

**ВИОЛОНЧЕ́ЛЬ** [*рус.* ⟨*ит.*] *и.* Ҙур скрипка рәүешендәге дүрт ҡыллы, ҡалын тауышлы музыка ҡоралы. *Виолончелдә уйнаусы.* ■ *Виолончелдең ҡалын тауыш менән моңланыуы Сынтимергә әсәһен, уның үҙ алдына көйләүен хәтерләтте.* Ш. Янбаев.

**ВИ́РА** [*рус.* ⟨*ит.*] *ымл.* Йөк тейәүсе, крансы, төҙөүсе, моряк һ. б. телендә йөрөгән «юғары», «күтәр» тигән мәғәнәләге команда; *киреһе* майна.

**ВИРА́Ж** [1] [*рус.* ⟨*фр.*] *и.* Самолёт йәки машинаның кәйелеп боролоуы. *Самолёт вираждан сыҡты.*

**ВИРА́Ж** [2] [*рус.* ⟨*фр.*] *и. фото.* Фотоға билдәле бер төҫ бирә торған химик иретмә.

**ВИРД** [*ғәр.*] *и. иҫк.* Билдәле бер ваҡытта уҡыла торған ҡыҫҡа ғына доға. *Вирд уҡыу.* ■ *Ғәләмәтен белерһегеҙ бәхет ҡунһа, гизәтте ғорурлыҡҡа һалмағанда. Вирд менән мәсеттә яңғыҙ ҡалып раббына золмана, тип зарланғанда.* Аҡмулла.

**ВИРТУО́З** [*рус.* ⟨*ит.*] *и.* Юғары техник оҫталыҡҡа эйә булған музыкант. *Виртуоз скрипкасы.* / Үҙ эшендә бик юғары оҫталыҡҡа өлгәшкән кеше.

**ВИ́РУС** [*рус.* ⟨*лат.*] *и.* Ябай микроскоп аша насар күренә йәки бөтөнләй күренмәй торған, йоғошло ауырыуҙар тыуҙырыусы бик ваҡ микроорганизм. *Бешмә вирусы.*

**ВИРУСЛЫ** *с.* Вирус тыуҙырған. *Вируслы грипп. Вируслы һары ауырыуы.*

**ВИРУСО́ЛОГ** [*рус.*] *и.* Вирусология буйынса белгес.

**ВИРУСОЛО́ГИЯ** [*рус.*] *и.* Вирустар тураһындағы фән.

**ВИ́СКИ** [*рус.* ⟨*ингл.*] *и.* Англияла эшләнгән араҡының бер төрө.

**ВИСКО́ЗА** [*рус.* ⟨*лат.*] *и.* Махсус эшкәртеү юлы менән целлюлозанан алынып, сүс яһау өсөн ҡулланылған матдә. / Шул матдәнән эшләнгәнептән һуғылған туҡыма. *Биҙәкле вискоза.* // *Вискоза күлдәк.*

**ВИ́СМУТ** [*рус.* ⟨*нем.*] *и.* Химик элемент, ҡыҙғылт аҡ төҫтәге мурт металл.

**ВИТАМИ́Н** [*рус.* ⟨ *лат.*] *и.* Кеше һәм хайуандар аҙығында йәшәү, шулай уҡ матдәләр алмашыныуы өсөн кәрәк булған төрлө химик составлы органик матдә. *Витаминға бай емеш. Витамин заводы.*

**ВИТАМИНЛАНЫУ** *ҡ. төш. ҡар.* **витаминлау.** *Витаминланған аҙыҡ.*

**ВИТАМИНЛАУ** *ҡ.* Витаминлы итеү. *Аҙыҡты витаминлау.*

**ВИТАМИНЛЫ** *с.* Витамины булған. *Витаминлы аҙыҡ. Витаминлы үлән оно.*

**ВИТРА́Ж** [*рус.* ⟨*фр.*] *и.* Төҫлө быяланан ҡоршап яһалған биҙәк йәки һүрәт. *Театр фойеһындағы витраж.*

**ВИТРЙНА** [*рус.* ⟨ *фр.*] *и.* **1.** Төрлө тауарҙы күрһәтеп ҡуя торған магазин тәҙрәһе. *Витринаға ҡуйыу.*

**2.** Күргәҙмә нәмәләр ҡуя торған быяла шкаф йәки тартма. *Китап витринаһы.* ■ *Урам мөйөшөндә игландар өсөн яһалған әйләнмәле витрина.* С. Агиш.

**ВИЦЕ-АДМИРАЛ** [*рус.* ⟨ *лат.* + *гол.* ⟨ *гәр.*] *и.* Контр-адмирал менән адмирал араһындағы хәрби дәрәжә һәм шул дәрәжәләге кеше.

**ВИЦЕ-ПРЕЗИДЕНТ** [*рус.* ⟨ *лат.*] *и.* Президент урынбаҫары.

**ВКЛАД** [*рус.*] *и.* **1.** Һаҡлыҡ кассаһына йәки банкҡа һалынған аҡса. *Отошло вклад. Билдәле бер срокка һалынған вклад. Шартлы вклад.*

**2.** *кар.* **өҫтәмә** I 2.

**ВКЛАДЧИК** [*рус.*] *и.* Вкладҡа аҡса һалған кеше.

**ВКЛЮЧАТЕЛЬ** [*рус.*] *и. кар.* **выключатель.**

**ВЛАСТЬ** [*рус.*] *и.* **1.** Дәүләт менән идара итеү хоҡуғы; политик хакимлек. *Совет власы. Власҡа килеү. Власты ҡулға алыу.* / Дәүләт идараһы органдары; хөкүмәт. *Ике властылыҡ.*

**2.** Етәкселек итеү хоҡуғы. *[Туғанов:] Ҡулыңда власть булһа, ниндәй рәхәт. Власть, власть! Ниндәй серле көсөң бар һинең, власть?!* Ә. Вәли. **Власть эйәһе** ҡулында власть булған кеше.

**ВОБЛА** [*рус.*] *и. шул ук* **диңгеҙ сабағы** (*кар.* **сабаҡ**[1]).

**ВОҒУЛ** [*рус.*] *и. иҫк.* Манси.

**ВОДЕВИЛЬ** [*рус.* ⟨ *фр.*] *и.* Йыр ҡатнаш шаян комедия (ғәҙәттә, бер-ике генә шаршауҙан тора).

**ВОДИТЕЛЬ** [*рус.*] *и.* Автобус, троллейбус, һ. б. машиналарҙы йөрөтөүсе. *Мотаһар Галин .. фашист танкыһының люгын асып, автомат төйҙәһе менән водителдең башына ҡундырҙы.* Ә. Ихсан.

**ВОДОКАЧКА** [*рус.*] *и.* Һыу яткылығынан һыуҙы һурып, кәрәк ергә ебәреп торған насослы йорт.

**ВОДОЛАЗ** [*рус.*] *и.* Махсус кейем кейеп һыу аҫтында эшләй торған кеше. *Водолаз кейеме.*

**ВОДОПРОВОД** [*рус.*] *и.* Халыҡты һәм төрлө объекттарҙы тәьмин итеү өсөн һыу ҡыуа торған ҡоролмалар системаһы. *Водопровод торбаһы.* ■ *Өфөлә беренсе водопровод 1901 йылда ғына һалынған.* «Совет Башҡортостаны», 1965, 16 ғинуар.

**ВОДОРОД** [*рус.*] *и.* Химик элемент, кислород менән ҡушылып һыу яһай торған еңел газ.

♦ **Водород бомбаһы** термоядро реакцияһына ҡоролған, шартлағыс һәм емергес көсө ифрат ҙур булған бомба.

**ВОЕВОДА** [*рус.*] *и. тар.* Боронғо Рустағы ғәскәр башлығы. *Өфө ҡалаһын һалыу мәсьәләһе Иван Нагой тигән воевода .. тарафынан 1579 йылда ҡуҙғатылған.* Х. Әбдрәшит. / 16 быуаттан 18 быуат аҙаҡтарына тиклемге Россиялағы ҡала йәки округ менән идара итеүсе.

**ВОЕНКОМ** [*рус.*] *и.* Хәрби комиссар. *[Ревком эшен] күптән түгел фронттан ҡайтҡан военком Петров .. алып бара ине.* Һ. Дәүләтшина.

**ВОЕНКОМАТ** [*рус.*] *и.* Хәрби комиссариат. *Унда [аҡ кирбес йортта] военкомат та, .. кыҙылармеецтар төшөр өсөн йәтешләнгән дөйөм торлаҡ та урынлашҡан.* Һ. Дәүләтшина.

**ВОЕНРУК** [*рус.*] *и.* Уҡыу йорттарындағы йәштәргә башланғыс хәрби белем биреү эше менән шөғөлләнгән уҡытыусы.

**ВОЕНЩИНА** [*рус.*] *и.* Капиталистик илдәрҙәге агрессив ҡарашлы хәрбиҙәр даирәһе. *Америка военщинаһы.*

**ВОЖАТЫЙ** [*рус.*] *и.* Пионер отрядының йәки дружинаһының етәксеһе.

**ВОЗЗВАНИЕ** [*рус.*] *и. кар.* **өндәмә.**

**ВОИН** [*рус.*] *и.* Һалдат, яугир.

**ВОКАЛИЗМ** [*рус.* ⟨ *лат.*] *и. лингв.* Телдәге һуҙынҡы өндәр системаһы.

**ВОКАЛЬ** [*рус.* вокальный ⟨ *лат.*] *с.* Йырлауға бәйләнешле, йырлау өсөн билдәләнгән. *Вокаль әҫәр.*

**ВОКЗАЛ** [*рус.* ⟨ *ингл.*] *и.* Тимер юл станциялары һәм пристандәрҙәге юлсыларҙы хеҙмәтләндереүгә тәғәйенләнгән бина. *Иҙел күперен үткән поезд ҡала тынлығын ярып, үҙенең килгәнен вокзалға хәбәр итә.* С. Агиш.

**ВОЛЕЙБОЛ** [*рус.* ⟨ *ингл.*] *и.* Тартып ҡуйылған селтәр аша туп һуғып уйнауҙан ғибарәт спорт уйыны. *Волейбол майҙаны. Волейбол тубы. Волейбол уйнау.*

**ВОЛЕЙБОЛСЫ** *и.* Волейбол уйнаусы.

**ВОЛИСПОЛКОМ** [*рус.*] *и. иҫк.* Волость башҡарма комитеты. *Волисполком председателе.*

**ВОЛКОМ** [*рус.*] *и. иҫк.* Партияның волость комитеты. *Волком секретары.* ■ *[Айбулат] халыҡ араһында совет власына ҡаршы ҡотҡо таратып яткан был өлкән кулакка [Ныяҙғолға] сара күрмәү волкомдың ҙур хатаһы икәнен әйтте.* Һ. Дәүләтшина.

**ВОЛКОМОЛ** [*рус.*] *и. иҫк.* Комсомолдың волость комитеты. *Һәр ячейка — тырыш ғаилә. Ҡараңғы ауыл актив тыуҙыра. Әлтәф инде түгел был ауылда, волкомолда мәсьүл ултыра.* Ғ. Хәйри.

**ВОЛОКИТА** [*рус.*] *и.* Суд йәки административ эште үтәүҙе, берәй мәсьәләне хәл итеүҙе төрлө сәбәптәр менән кисектерә килеү, юрамал оҙаҡҡа һуҙыу күренеше. *Халыҡ контроле органдары .. хужаһыҙлыкка һәм әрәм-шәрәм итеүҙәргә, волокитаға һәм бюрократизмға ҡаршы көрәш алып бара.* «Башҡорт АССР-ының Конституцияһы», 1984.

**ВОЛОСТЬ** [*рус.*] *и.* Революцияға тиклемге Россияла һәм СССР-ҙа: өйәҙ эсендәге иң бәләкәй административ-территориаль берәмек (1929-30 йылдарға тиклем һаҡлана). *Волость комитеты. Волость үҙәге.* ■ *Волость бөтөрөлөп, районға бүлеү сыккас, район үҙәге [Таллынан] Арҡаюл тигән икенсе ауылға күсте.* Ә. Вәли.

**ВОЛЫНКА** [*рус.*] *и.* Ҡыуыҡҡа һыбыҙғылар ҡуйып яһалған халыҡ музыка ҡоралы.

**ВОЛЬЕР** [*рус.* ⟨ *фр.*] *и.* Хайуан һәм ҡоштарҙы тотоу өсөн кәртәләп алынған тирә-яғы асыҡ урын (ғәҙәттә, зоопаркта була).

**ВОЛЬТ** [*рус.* ⟨ *ит.*] *и.* Электр тогы көсөргәнешен үлсәү берәмеге.

**ВОЛЬТЛЫ** *с.* Көсөргәнеше күпмелер вольтҡа тиң булған. *Промышленность энергияһының өс йөҙ һикһән вольтлыһын да, ике йөҙ егерме вольт-*

*лыһын да файҙаланырға ярай.* «Совет Башҡортостаны», 1965, 20 июль. **Түбән вольтлы** көсөргәнеше бәләкәй булған. *Түбән вольтлы электр селтәре.* **Юғары вольтлы** көсөргәнеше ҙур булған. *Юғары вольтлы электр селтәре.*

**ВОЛЬТМЕ́ТР** [*рус.*] *и.* Даими һәм алмаш ток сынйырҙарында электр тогы көсөргәнешен үлсәй торған прибор.

**ВОЛЬФРА́М** [*рус.* ⟨ *нем.*] *и.* Химик элемент, иреүгә иң сыҙамлы аҡ металл.

**ВОЛЮНТАРИ́ЗМ** [*рус.* ⟨ *лат.*] *и.* **1.** *филос.* Тәбиғәт һәм йәмғиәт үҫешендәге хәл иткес көстө кешенең ихтыярына ҡайтарып ҡалдырған, объектив законлыҡты инҡар иткән идеалистик ҡараш. *Беҙҙең партия хужалыҡ һәм политик бурыстарҙы субъектив рәүештә хәл итеүгә килтергән, эштә ауырлыҡтар һәм хаталар тыуҙырған волюнтаризмға ҡырҡа ҡаршы сыҡты.* «Совет Башҡортостаны», 1965, 15 сентябрь.

**2.** *психол.* Ихтыярҙы психик тормоштоң төп факторы тип ҡараған йүнәлеш.

**ВОССТА́НИЕ** [*рус.*] *и.* Синфи, милли иҙеүгә ҡаршы халыҡтың ҡоралды күтәрелеше. *Крәҫтиәндәр восстаниеһы. Ҡоралды восстание. Восстание күтәреү. Восстаниены баҫтырыу.*

**ВО́ТУМ** [*рус.* ⟨ *лат.*] *и.* Тауыш биреү юлы менән сығарылған ҡарар.

◆ **Ышаныслыҡ** (*йәки* **ышанысһыҙлыҡ) вотумы** парламенттың хөкүмәт йәки хөкүмәт ағзаһының эшмәкәрлеген хуплау (йәки хупламау) тураһындағы ҡарары.

**ВО́ТЧИНА** [*рус.*] *и. иҫк.* Нәҫелдән-нәҫелгә күсә торған ер.

**ВОТЯ́К** [*рус.*] *и. иҫк.* Удмурт.

**ВӨЖҮБ** [*ғәр.*] *и. иҫк. кит.* Зарур нәмә, зарурлыҡ. *Өйрәнмәй фарыз, вөжүб, тик тормағыҙ.* Аҡмулла.

**ВӨЖҮД** [*ғәр.*] *и. иҫк.* **1.** Барлыҡ, булмыш. *Ғауам халҡы баштарын беҙ ҡаңғырттыҡ, вөжүдебеҙ ғайн бер афәт булды.* Аҡмулла.

**2.** Кәүҙә, тән. *Гөл битенән бер генә үпһәм ҡыҙыу иренем менән, бар вөжүдемде илаһи бер мөҡәддәс нур баҫа.* М. Ғафури.

◆ **Вөжүдкә сығыу** барлыҡҡа килеү, ғәмәлгә килеү. *Ҡуяндар үҙҙәре лә был көтөлмәгән нәмәнең вөжүдкә сығыуынан ҡурҡып ҡалды. Яһалып бөткәс, айыу һүрәте янына килергә бәләкәстәренең хатта йөрәге етмәй торҙо.* Б. Мирзанов.

**ВРАТА́РЬ** [*рус.*] *и.* Футбол, хоккей уйынындағы ҡапҡа һаҡсыһы; ҡапҡасы.

**ВРАЧ** [*рус.*] *и.* Юғары медицина белеме булған, ауырыуҙарҙы дауалаусы кеше. *Балалар врачы. Теш врачы. Больницаның баш врачы.*

**ВРАЧЛЫҠ** *и.* Врач булыу һөнәре. *Врачлыҡҡа уҡыу.*

**ВРЕДИ́ТЕЛЬ** [*рус.*] *и. кар.* **короткос**[1].

**ВУЗ** [*рус.*] *и.* Юғары уҡыу йорто. *Вуз программаһы. Вуз белеме. Вуз бөтөрөү. Вузда уҡыу.*

**ВУЛКА́Н** [*рус.* ⟨ *лат.*] *и. кар.* **янартау.**

**ВУЛКАНИЗА́ЦИЯ** [*рус.*] *и. тех.* Резинаға әйләндереү өсөн каучукты күкерт йәки башҡа матдә менән юғары температурала эшкәртеү эше. *Вулканизация яһау.*

**ВУЛКАНИЗАЦИЯЛАНЫУ** *к. төш. кар.* **вулканизациялау.**

**ВУЛКАНИЗАЦИЯЛАУ** *к. тех.* Резинаға әйләндереү өсөн каучукты ғәҙәттә, күкерт менән юғары температурала эшкәртеү. *Вулканизациялау цехы.*

**ВУЛЬГАР** [*рус.* вульгарный ⟨ *лат.*] *с.* **1.** Әҙәпһеҙ. *Вульгар һүҙ.*

**2.** Ысын мәғәнәһе үҙгәрерлек, төп асылы боҙолорлоҡ итеп тупаҫ рәүештә ябайлаштырылған. *Вульгар материализм. Вульгар социологизм.*

**ВУЛЬГАРИ́ЗМ** [*рус.*] *и.* Әҙәби телдә ҡулланылған әҙәпһеҙ, вульгар һүҙ.

**ВУЛЬГАРЛАШТЫРЫУ** *к.* Берәй нәмәнең төп мәғәнәһе, асылы боҙолорлоҡ итеп тупаҫ рәүештә ябайлаштырыу. *Пленум партияның марксизм-ленинизмды вульгарлаштырыу менән килешмәйәсәген раҫланы.* «Совет Башҡортостаны», 1965, 12 август.

**ВЫ́ВЕСКА** [*рус.*] *и.* Ойошма йәки предприятиеның исемен, башҡарған эшен күрһәтеп элеп ҡуйылған яҙыулы таҡта. *Мөйөштәге ҙур бер ак магазин алдына килеп туҡтаным. .. Иң элек вывескаһының яҙыуын әнәһенән ебенә тиклем уҡып сыҡтым: «Дәүләт мануфактура магазины».* С. Агиш.

**ВЫ́ГОВОР** [*рус.*] *и. кар.* **шелтә.**

**ВЫ́ДЕРЖКА** [*рус.*] *и.* Фотоаппарат объективы асыҡ тотолған ваҡыт.

**ВЫЖ** *окш.* Бик етеҙ хәрәкәт итеп, һауа ярып барған нәмәнән сыҡҡан тауышты белдергән һүҙ. *Выж итеп ҡалды.*

**ВЫЖ-ВЫЖ** *окш.* Ҡабат-ҡабат выж иткән тауышты белдергән һүҙ. *Бер туҡтауһыҙ пуля үтә выж-выж итеп ҡолаҡтан* (Бәйеттән).

**ВЫЖДАН** [*ғәр.*] *и.* Күңел инсафлылығынан килгән яуаплылыҡ тойғоһо; намыҫ. *Выждан ғазабы. Выждан ҡушыу. Выждан менән эшләү.* ■ *Кеше тормошонда ниҙәр теләмәй? Тик теләкте выждан кәртәләй.* Ғ. Хәйри. *БАССР граждандарына выждан ирке, йәғни теләгән бер диндә тотоу йәки бер ниндәй диндә лә тотмау, дини ғибәҙәттәрҙе үтәү, йәки атеистик пропаганда алып барыу хоҡуғы гарантиялана. Дингә ышаныу менән бәйле рәүештә дошманлыҡ һәм күрә алмаусылыҡ тыуҙырыу тыйыла.* Башҡорт АССР-ының Конституцияһы, 1984.

**ВЫЖДАНЛЫ** *с.* Выжданды белгән, саф йөрәкле; намыҫлы. *Зәйнәп туҡмалып, ҡарарға ерәнгес ҡатын булып көн күрә. Шулай булһа ла, ул выжданлы һәм ғорур тәбиғәтле бер ҡатын булып ҡала.* М. Ғафури.

**ВЫЖДАНҺЫҘ** *с.* Выжданды белмәгән; намыҫһыҙ, оятһыҙ. *Зыяны ултыртып ҡуйғандар. Ниңә? Ни өсөн? Яңылышлыҡмы был? Әллә яуыз уйлы, выжданһыҙ, ҡара йөрәк яласының мәкерлегеме?* М. Тажи. / Әрләгәндә әйтелә.— *Теге донъяла аллаңа ошаҡларһың, эт! Һин аҙмы ирҙең башын ашаның? Выжданһыҙ!* Т. Хәйбуллин.

**ВЫЖДАНҺЫҘЛЫҠ** *и.* Намыҫһыҙлыҡ, оятһыҙлыҡ.

**ВЫЖЛАТЫУ** *к.* **1.** Бик тиҙ, етеҙ хәрәкәт иттереү. *Выжлатып алып сығып китте.*

**2.** Эш боҙған өсөн әрләү; һүгеү, быжғыртыу. *[Аҡназар бабай:] Быйыл яҙ көнө бәләкәй генә ике аҙғын малайҙы ла выжлатып ҡыуып ҡайтар-*

*ҙым: кул буйындағы таллыктарҙан кош ояһы эҙләп йөрөйҙәр ине.* К. Даян.

**ВЫЖЛАУ** *к.* **1.** Һыҙғырған һымак тауыш сығарыу, выж итеү. *Ел-дауыл тышта выжлай ҙа выжлай, әллә малайҙар өшөр тип уйлай.* К. Кинйәбулатова. *Тимергә тимер бәрелгән тауыш, моторҙың выжлап әйләнеүе .. мастерской эсен яңғырата.* А. Карнай.

**2.** Тиҙ, етеҙ хәрәкәт итеү. *Теге урамдан автобус выжлап үтеп тора.* И. Абдуллин.

**ВЫЖТ** *окш.* **1.** Етеҙ хәрәкәтте белдергән һүҙ. *Тау түбәһенә күтәрелә лә ул [Исмәғил], тукталып бер аҙ ғына тын ала. Шунан саңғыһына йәйләп баҫып ала ла, выжт итеп төшә лә китә. Буран ғына уйнап кала уның артынан.* Я. Вәлиев.

**2.** *ымл. мәғ.* Кешене каты асыу менән эргәнән кыуғанда әйтелә. *Выжт бынан! Күҙемдән юғал!*

**ВЫЖЫЛДАТЫУ** *к.* Выж-выж иттереү. *Выжылдатып, баҫыу буйлатып, камылдарҙы кыйнай көҙгө ел.* Ғ. Мәсғүт.

**ВЫЖЫЛДАУ** *к.* Выж-выж тигән тауыш сығарыу, выж-выж итеү. *Һирәк булһа ла выжылдап үткән пулялар һуғыштың алыҫ түгел икәнен күрһәтә.* А. Таһиров.

**ВЫЖЫЛДАШЫУ** *к. урт. кар.* **выжылдау.** *Ана, себен, уҫал күгәүендәр выжылдашып килеп етәләр.* Х. Хәйри.

**ВЫКЛЮЧА́ТЕЛЬ** [*рус.*] *и.* Сымдағы электр тогын өҙә йәки тоташтыра торған кулайлама.

**ВЫ́МПЕЛ** [*рус.* ⟨ *гол.*] *и.* **1.** Дәүләт билдәһе итеп хәрби карапка куйыла торған, осо асалы оҙон тар байрак. / Бәләкәй өсклө байрак (ғәҙәттә, кемдер ярышта еңгәндә, берәй уңышка өлгәшкән һ. б. осракта тапшырыла). *Кыҙыл вымпел. Көсмә вымпел. Еңеүселәргә вымпел тапшырыу.*

**2.** Самолёттан ергә ташлау өсөн эсенә газета, китап һ. б. һалынған, сағыу таҫма бәйләнгән кумта йәки ҙур төргәк.

**3.** Айырым биҙәге йәки яҙыуы булған һәм кайҙалыр билдә итеп ебәрелә торған металл киҫәге. *Сулпан планетаһына төшөргә тейеш булған аппаратка Советтар Союзының гербы төшөрөлгән вымпел куйылған.* «Совет Башкортостаны», 1966, 10 март.

**ВЫШКА** [*рус.*] *и.* Билдәле максат өсөн төҙөлгән тар бейек королма. *Баҫыу вышкаһы. Быраулау вышкаһы. Вышканан һыуға һикереү.* ■ *Ишембайҙың тәүге вышкалары һаклай беҙҙең йәшлек яныуын. Улар әле һаман фонтан ата.* Ғ. Әмири.

**ВЬЕТНАМ** *и.* Вьетнамдың төп халкын тәшкил иткән милләт һәм шул милләттең бер кешеһе *Вьетнам халкы. Вьетнам катыны. Вьетнам теле.*

**ВӘ** [*ғәр.*] *теркә. иҫк.* Һәм. *Вә башкалар.* ■ *Мең вә миллион йорт-йыһаздар кем өсөн бикләнгәндәр?* Т. Йәнәби. **Вә ғәйреләр** һәм башкалар. *Беҙ, кара халык, аңламаҫлык занятиеға йөрөтәләр, белмәһәң, подвинтовка куялар, яңактарға һалып ебәрәләр вә ғәйре, вә ғәйреләр.* Н. Кәрип. **Вә йәнә** (*йәки* **һәм дә**) *иҫк.* шулай ук.— *Вә йәнә кәләм тибрәтеп хат яҙыусы һөйөклө туғаным Диләфрузға күп сәләм.* Һ. Дәүләтшина.

**ВӘҒИЗ** [*ғәр.*] *и.* **1.** Вәғәз биреүсе.

**2.** (*баш хәреф менән*) Ир-ат исеме.

**ВӘҒӘҘӘ** [*ғәр.*] *и.* Берәй нәмәне эшләргә, үтәргә ышандырып әйтелгән, йөкләмә рәүешендәге һүҙ. *Буш вәғәҙә. Вәғәҙә алыу. Вәғәҙә биреү. Вәғәҙә боҙоу. Вәғәҙә куйыу. Вәғәҙәлә тороу. Вәғәҙәне үтәү. Вәғәҙәне онотоу.* ■ *Батша үҙ вәғәҙәһе буйынса Буҙансы батырға кыҙын да, ярты батшалығын да биргән* (Әкиәттән).

□ **Вәғәҙә итеү** (*йәки* **кылыу**) ышандырып һүҙ биреү. *Кыҙын коткарған кешегә батша ҙур бүләк вәғәҙә итә* (Әкиәттән).

● *Вәғәҙәһен боҙған башһыҙ калған.* Мәкәл. *Вәғәҙә — ярты иман.* Әйтем.

**ВӘҒӘҘӘЛЕ** *с.* **1.** Вәғәҙәһендә тороусан. *Вәғәҙәле кеше.*

**2.** Вәғәҙә бирешкән, вәғәҙә менән бәйле. *Вәғәҙәле йәр.*

**ВӘҒӘҘӘЛӘНЕҮ** *к. төш. кар.* **вәғәҙәләү.** *Һүҙҙә торҙок: өс көн алдан бирҙек майға вәғәҙәләнгән бүләкте.* С. Кудаш.

**ВӘҒӘҘӘЛӘҮ** *к.* Вәғәҙә итеү, эшләргә тип һүҙ биреү.

**ВӘҒӘҘӘЛӘШЕҮ** *к. урт. кар.* **вәғәҙәләү.** *[Сәғиҙәнең] вәғәҙәләшеп куйған егете барҙыр әле.* М. Тажи.

**ВӘҒӘЗ** [*ғәр.*] *и.* **1.** Дин әһелдәренең халыкты өйрәтеп, өгөтләп һөйләгән һүҙе. *Вәғәз укыу. Вәғәз әйтеү.* ■ *Мулла башта вәғәз һөйләп алды: — Йәмәғәт,— ти,— ихлас күңел менән аллаға ялбарайык.* А. Карнай.

**2.** *көсм.* Акыл өйрәтеп, төшөндөрөргә, күндерергә тырышып һөйләгән һүҙ; өгөт-нәсихәт. *Рәхимә аҙакҡы һүҙҙәрен әйтте лә, вәғәзен бөтөргән төҫ менән, кейеҙ буйлатып ике аяғын һуҙып ебәрҙе.* Һ. Дәүләтшина.

□ **Вәғәз итеү** дин-шәриғәткә өндәү, өйрәтеү. *Иртәнсәк Ғәлимйән мулла дәрес китаптарын күтәреп, шәкерттәрҙе вәғәз итергә керә.* М. Ғафури.

**ВӘҒӘЗЛӘҮ** *к.* Акыл өйрәтеп һүҙ һөйләү; өгөтләү. *[Ул] колхоз ойошкан сактарҙа тәү башлап ингән кеше, өй һайын инеп карттарҙы вәғәзләп йөрөгән.* С. Кудаш.

**ВӘҒӘЗСЕ** *и.* Вәғәз һөйләүсе, өгөт-нәсихәт укыусы.

**ВӘҒӘЛӘЙКҮМ** [*ғәр.*]: **вәғәләйкүм әссәләм** сәләм биреп иҫәнләшкән кешегә яуап итеп әйтелә торған һүҙ; һеҙгә лә сәләм.— *Әссәләм әғәләйкүм! — тип Тимергәле карт килеп инде.— Вәғәләйкүм әссәләм. Әйҙә, корҙаш, әйҙә, юғары уҙ,— тине Үмәр.* Һ. Дәүләтшина.

**ВӘЖИҒӘ** [*ғәр.*] *и. иҫк.* **1.** Ауыртыу хисе, сир.

**2.** *көсм.* Ғазап. *[Кыҙ] колағын тешләгән егетте түгел, икенсе егетте ярата, ҙур кайғы, ауыр вәжиғә була торғайны.* З. Биишева.

**ВӘЖИП** *и. кар.* **важиб.**

**ВӘЖҺЕ** [*ғәр.*] *и. иҫк. кит.* Сәбәп, нигеҙ, асыл.

**ВӘЗЕН** [*ғәр.*] *и. иҫк. кит.* **1.** Үлсәм.

**2.** Шиғырҙағы ижек һаны, шиғыр үлсәме. *Беҙҙә, бигерәк тә һуңғы вакыттарҙа, кафиә менән тип, шиғыр вәзененә һәм мәғәнәгә зарар килтерерлек .. назымдар яҙалар.* М. Ғафури.

**ВӘЗЕНЛӘҮ** *к. иҫк. кит.* Үлсәү. *Ата кеше улын эшкә күндереү менән бергә ер йәмен тойҙоророға,*

*уның хәсиәтен, сер хикмәттәрен берәмеклә, вәзенләп аңлатырға ла сараларын таба.* Ғ. Хөсәйенов.

**ВӘЗИР** [*ғәр.*] *и. иҫк.* **1.** Хөкүмәт ағзаһы; министр. *Актүбә вәзир булып алғас, халык өсөн иркенерәк булып китте, ти.* «Алпамыша».

**2.** (*баш хәреф менән*) Ир-ат исеме.

**ВӘЙ, вә-ә-әй** *ымл.* **1.** Үткәндәгеп иҫкә төшөрөп, үкенес, һағыш белдергәндә әйтелә. *[Бабай:] Вәй, бар ине саҡтар, кем, ярлы меңкен бил бөгөр, тир түгер, бай мал йыйыр, юкка-барға акса туҙҙырыр ине. Вә-ә-әй!* «Совет Башҡортостаны», 1966, 1 май.

**2.** Көй күтәргәндә әйтелә. *Урал көйөнә .. йырланы Юлдыбикә әбей. «Вә-ә-әй! .. Әллә кемдең инәһе»,— тип кумәк бисәләр кушылып куйҙылар.* Т. Хәйбуллин.

**ВӘЙРАН** *с. кар.* **вайран.**

**ВӘКИЛ** [*ғәр.*] *и.* **1.** Дәүләт, ойошма, төркөм исеменән эш алып барған кеше. *Дипломатик вәкил. Аймак вәкиле. Хөкүмәт вәкиле.* ■ *[Ғизҙәтулла:] Беҙгә райондан ниндәй вәкил киләсәк икән?* Ғ. Әхмәтшин.

**2.** Теге йәки был төркөмгә ҡараған кешеләрҙән берәү. *Утыҙҙан ашыу милләт вәкиле йәшәй.* ■ *Совет шарттарында тәрбиәләнеп үҫкән быуындың вәкиле Александр Матросов бөгөн дә замандаштары менән бер сафта атлап килә.* Х. Ғиләжев.

**3.** (*баш хәреф менән*) Ир-ат исеме.

**ВӘКИЛЛЕК** *и.* Берәйһенең мәнфәғәтен күҙәткән учреждение. *Дипломатик вәкиллек. Сауҙа вәкиллеге. Даими вәкиллек.*

**ВӘКӘЛӘТ** [*ғәр.*] *и.* **1.** Кемдең дә булһа исеменән эш алып барырға бирелгән хоҡуҡ. *Беҙ — уҙәктән ҙур эштәр тураһында вәкәләт алып килгән кешеләр, ә һеҙ бында беҙҙе шөбһәгә алып булышаһығыҙ.* И. Насыри.

**2.** *кар.* **вәкиллек.** *Акса ла бөтөп бара. Куп уйлап торманым, «Каруан һарай» ҙағы Башкортостан вәкәләтенә киттем.* Ғ. Хәйри.

**ВӘКӘЛӘТЛЕ** *с.* Кемдең дә булһа исеменән эш алып барырға хоҡуҡлы. *Вәкәләтле орган. Вәкәләтле хөкүмәт.* ■ *Съездар араһында айырыуса мөһим политик проблемаларҙы Үҙәк Комитет Пленумдарынан киңерәк, вәкәләтлерәк партия форумдарында тикшерергә кәрәк булыуы мөмкин.* «Совет Башкортостаны», 1966, 15 апрель.

**ВӘҠАР** *и. кар.* **ваҡар.**

**ВӘҠАХӘТ** [*ғәр.*] *и. иҫк.* Оятһыҙлыҡ, әҙәпһеҙлек.

**ВӘҠИФ** [*ғәр.*] *с. иҫк. кит.* Хәбәрҙар булған, белгән.

□ **Вәҡиф булыу** хәбәрҙар булыу, белеү. *Ошбу көндәрҙә бер-беребеҙҙең хәленә вәҡиф булырға тейешбеҙ.* М. Ғафури.

**ВӘҠӘФАТ** [*ғәр.*] *иҫк. кит.* Туҡталыш, туҡтау урыны.

**ВӘЛ** [*рус.* вуаль ⟨ *фр.*] *и.* **1.** Һирәк итеп бәйләнгән үтә күренмәле селтәр шәл. *Тайба әбей биргән яҙғы бәрәс йөнөнән Емеш үҙенә вәл һымаҡ итеп аҡ шәл бәйләп алды.* З. Биишева.

**2.** *диал.* Дебет шәл.

**ВӘЛИ** [*ғәр.*] *и. иҫк.* **1.** Идара итеүсе; түрә, хужа. *Неплюевка кәҙәр булған вәлиҙәр күбеһенсә Һамарҙа торҙо.* М. Һаҙыев.

**2.** Кемдең дә булһа мәнфәғәтен һаҡлаған кеше; опекун.

**3.** *дини.* Изге бәндә. *Кеҫәһендә тәсбихе кыҙыл булһа һәм тағы ике аршин оҙон булһа, шул рәүештә берәр хәтем ултырып килһә, уҙен-уҙе камил вәли һанар ине* (Мөнәжәттән).

**4.** (*баш хәреф менән*) Ир-ат исеме.

**ВӘЛИМӘ** [*ғәр.*] *и. иҫк. кит.* **1.** Туй, мәжлес.

**2.** (*баш хәреф менән*) Ҡатын-ҡыҙ исеме.

**ВӘЛИТ** [*ғәр.*] *и. иҫк. кит.* **1.** Бала.

**2.** (*баш хәреф менән*) Ир-ат исеме.

**ВӘС-ВӘС-ВӘС** *ымл.* Көй күтәргәндә әйтелә. *Ҡарттар геүләп көй күтәрҙе: «Ваһай икән, мәрҙәс! Вәс-вәс-вәс!»* Һ. Дәүләтшина.

**ВӘСИЛӘ** [*ғәр.*] *и. иҫк. кит.* **1.** Сара, әмәл.

**2.** (*баш хәреф менән*) Ҡатын-ҡыҙ исеме.

**ВӘССӘЛӘМ** [*ғәр.*] *и.* Бөттө, шуның менән эш тә бөттө; бөттө-китте. *[Якуп:] Беҙ ҡырауҙан ҡурҡмайбыҙ, Рөстәм. Таң менән тиреҫкә ут төртәбеҙ .. вәссәләм!* И. Абдуллин. *Ысынлап та, барып күренһәм, нисек булыр икән? .. Барам да күренәм — вәссәләм! — тип уйланы [айыу].* Б. Мирзанов.

**ВӘСҮӘСӘ** [*ғәр.*] *и.* **1.** Күңел аҙҙырғыс нәмә. *[Хәлиулла — Салихҡа:] Беҙ һинең менән көфөр һуҙ, шайтан вәсүәсәһе һөйләп ултырабыҙ. Йәшен атып үлтермәһен.* С. Агиш.

**2.** Күңелгә хәүеф һала торған нәмә; шик, шөбһә. *Вәсүәсәгә төшөрөү.* ■ *[1-се һалдат:] Уңған ҡатын ул таба, изге ҡатын ҡыҙ таба, тигән һүҙ бар. Хәйер, кеше гел генә изге булып тормай инде. [2-се һалдат:] Йә, йә, кеше күңеленә вәсүәсә һалма. Ҡотло булһын бәпесең, Яхыя.* М. Кәрим.

**ВӘСҮӘСӘЛЕ** *с. һөйл.* **1.** Күңел аҙҙырғыс. *Вәсүәсәле һуҙҙәр һөйләү.*

**2.** Шикле, шөбһәле, хәүефле. *Шик уятҡан вәсүәсәле күренеш.*

**ВӘТ** [*рус.* вот] *киҫ. һөйл.* **1.** Өндәү һөйләмен эмоциональ яҡтан көсәйтеү маҡсатында әйтелә. — *Вәт маладис! Илла аҡыллы егетһең инде!* Б. Бикбай. *[Эреҫ:] Ҡалайтып яҡлашып ултырған була. Риза түгелмен, ташламайым, вәт!* Ғ. Дәүләтшин.

**2.** Берәй нәмәнең һөҙөмтәһен белдереп, шуға баҫым яһап ҡуйыу өсөн әйтелә. *[Ямал:] Иң әлек кеше булһын, ирлеген күрһәтһен, .. бисә-сәсә араһында йөрөмәһен, вәт шул.* М. Тажи.

**ВӘХЕШ** [*ғәр.*] *и. кар.* **вәхшилек.**

**ВӘХИ** [*ғәр.*] *и. иҫк. кит.* **1.** Алла тарафынан күңелгә һалынған уй, фекер. *Ер йөҙөнә рәхмәтен, илһамдарын киҫтә хоҙай, һис кешегә вәхи килмәй, үтте көндәр. М. Ғафури.*

**2.** (*баш хәреф менән*) Ир-ат исеме.

**ВӘХШИ** [*ғәр.*] *с.* **1.** Тәүге дәүер культураһы кимәлендә торған (кешегә ҡарата); ҡырағай. *Вәхши халыҡ.* ■ *Мең ярымдан артыҡ һыбай, йөҙҙән артыҡ ылау, алтмышлап ҡыҙ-ҡатын, бер көтөү һыйыр-һарыҡ малы ҡыуып, вәхши ҡус һымаҡ, бөтә ауылды ябырып алды.* Һ. Дәүләтшина. / Ҡырҙа йәшәгән, ҡулға эйәләшмәгән (йәнлеккә ҡарата); ҡырағай. *Кешеләр тормоштарының иң тәүге дәүерендә вәхши хайуандар*

*аулау менән һәм тамыры йәки емеше ашарға ярарлыҡ үләнде йыйыу менән көн күргән, тамаҡ туйҙырған.* Ғ. Ғисмәти.

**2.** *күсм.* Йыртҡыс, ҡанһыҙ. *Вәхши кеше. // [Ғәйнулла мулла:] Был вәхшигә оҡшаған башҡорттарға ышаныуы ҡыйын, бик ныҡ ҡыҙҙырһаң, үҙеңде ботарлап ташлауҙары бар, улар мәңге сукмарлы халыҡ.* Һ. Дәүләтшина.

**ВӘХШИҘӘРСӘ** *р.* Йыртҡыстарса, рәхимһеҙ рәүештә. *Үҙебеҙҙе солғап алған тәбиғәт шарттарын .. вәхшиҙәрсә әрәм-шәрәм итеүселәр ҙә осрай әле.* В. Исхаҡов.

**ВӘХШИЛЕК** *и.* **1.** Культура түбәнлеге; ҡараңғылыҡ, ҡырағайлыҡ. *Был тирәләге [Ҡулбаш волосындағы] халыҡты ҡара төн һымаҡ дини фанатизм, иҫке ғөрөф-ғәҙәт, вәхшилек, коллоҡ баҫып алған.* А. Карнай.

**2.** *күсм.* Йыртҡыслыҡ, ҡанһыҙлыҡ.

**ВӘХШИЛӘНЕҮ** *ҡ.* **1.** Вәхши хәлгә килеү, ҡырағайланыу (кешегә ҡарата).

**2.** *күсм.* Йыртҡысланыу ҡанһыҙланыу. *Һаман һуғыш бара .. һаман әллә нишләй кеше. Ә аҡылы арҡан һайын вәхшиләнә бара төҫлө.* Н. Нәжми.

**ВӘХШИӘТ** [*ғәр.*] *и. иҫк.* Вәхшәтлек. *Юл бирмәмен фәхшәт, вәхшиәткә, күкрәк киреп ҡаршы торормон.* Т. Йәнәби.

**ВӘХШӘТ** [*ғәр.*] *и. ҡар.* **вәхшәтлек.** *Аҡтар вәхшәтенән, байҙар фәхшәтенән туйған ауылдар.* С. Ҡудаш.

**ВӘХШӘТЛЕК** *и.* **1.** Культура түбәнлеге; ҡараңғылыҡ, ҡырағайлыҡ.

**2.** *күсм.* Йыртҡыслыҡ, ҡанһыҙлыҡ, рәхимһеҙлек. *Дошман һаман һөжүм итә. Бөгөн инде был уның ун беренсе атакаһы.. «Эй, кешеләр! Был ни эшләүегеҙ?! Аҡылдан шаштығыҙмы әллә? Етәр, туҡтатығыҙ был вәхшәтлекте!»* Ғ. Әмири.

**ВӘҺЕМ** [*ғәр.*] *и. иҫк. кит.* Уй, хыял. *Буш вәһемдәр менән ыҫланған хыялым ләүкәһе.* Ш. Вабич.

**ВӘҺМИ** [*ғәр.*] *с. иҫк. кит.* Хыяли, фарази.

**ВӘҺӘ** [*ғәр.*] *и. иҫк.* Сүлдәге һыулы, йәшеллекле урын; оазис.

**ВӘ-ҺӘ-ҺӘЙ** *ымл. ҡар.* **вәшкәй.**

**ВӘШКӘЙ, вәшкә-ә-әй** *ымл.* Көй күтәргәндә әйтелә. *Тулы кәүҙәле бер ҡунаҡ: «Был тәгәскәйҙәрҙең ай төптәре — күк күгәрсенкәйҙәрҙең һөттәре»,— тип йырлап ебәрҙе. Башҡа ҡунаҡтар: «Вәшкә-әй!» — тип, уның йырына көс биреп, күтәреп алды.* Ш. Шәһәр.

# Г

**Г** [гэ] Башҡорт алфавитының дүртенсе хәрефе.

**ГА** *и.* «Гектар» һүҙенең ҡыҫҡартмаһы. *10 га майҙан.*

**ГАБАРДИ́Н** [*рус.* ⟨ *фр.*] *и.* Пальто һәм костюм өсөн ҡулланылған йөн туҡыма төрө. *Габардин костюм. Габардин салбар.*

**ГАБАРИ́Т** [*рус.* ⟨ *фр.*] *и.* **1.** Төрлө нәмәнең тышҡы дәүмәле. *Бәләкәй габаритлы. Ҙур габаритлы.*

**2.** *ж.-д.* Тимер юлдан яҡындағы йорт-ҡорамалға тиклемге мотлаҡ ара.

**ГА́ВАНЬ** [*рус.* ⟨ *гол.*] *и.* Диңгеҙ йәки йылға буйының ҡарап туҡтар өсөн хеҙмәт иткән ышыҡ урыны.

**ГА́ГА** [*рус.*] *и.* Өйрәктәр ғаиләһенә ҡараған төньяҡ диңгеҙҙәрҙәге йылы йомшаҡ мамыҡлы өйрәк. *Инә гага.* ■ *Гага тигән диңгеҙ кошоноң 50—100 грамм мамығынан да йылы ҡышҡы пальто тегеп йәки юрған һырып була.* «Совет Башҡортостаны», 1966, 21 октябрь.

**ГАГА́РА** [*рус.*] *и.* Төньяҡ диңгеҙҙәрҙәге ҡуйы йөнлө эре һыу ҡошо. *Гагаралар ҙа ыңғырашалар .. йәшен һуғыуы ҡурҡыта уларҙы.* Н. Иҙелбай.

**ГАГА́РКА** [*рус.*] *и.* Ваҡ өйрәк ҙурлығындағы төньяҡ диңгеҙ ҡошо.

**ГАГАУЗ** [*рус.*] *и.* Украина һәм Молдавия ССР-ында, Болгария һәм Румынияла йәшәгән, культураһы яғынан болғарҙарға яҡын торған халыҡ һәм шул халыҡтың бер кешеһе. *Гагауз халҡы. Гагауз ҡатыны. Гагауз теле.*

**ГАЗ** [1] [*рус.* ⟨ *фр.*] *и.* **1.** Матдәнең айырым өлөшсәләре үҙ-ара тартылыу көсө менән бәйләнмәү сәбәпле тирә-яҡҡа, һауаға тиҙ һәм еңел таралып, осоп торған хәле. *Ағыулы газ. Йәшкәҙәткес газ. Тонсоҡторғос газ. Углекислый газ. Шартлатҡыс газ. Янар газ.*

**2.** Яғыу, яҡтыртыу һ. б. маҡсатта ҡулланыла торған, таралып, осоп торған йәки пар хәлендәге матдәләрҙең дөйөм исеме. *Тәбиғи газ. Газ баҫымы. Газ промышленносы. Газ яҡтылығы. Газ плитәһе. Газ үткәреү. Газ яғыу.*

♦ **Газ биреү** моторҙы ебәреү йәки автомобиль, танк, самолёт һ. б. шуның кеүек машиналарҙың тиҙлеген арттырыу. *Тракторға газ биреү.*

**ГАЗ** [2] [*рус.* ⟨ *фр.*] *и.* Үтә күренмәле йоҡа ебәк туҡыма. *Аҡ төҫтәге газ. // Газ яулыҡ.*

**ГАЗГО́ЛЬДЕР** [*рус.* ⟨ *ингл.*] *и.* Газды йыя, һаҡлай һәм торбаларға тарата торған ҡорос ҡоролма.

**ГАЗЕ́ЛЬ** [*рус.* ⟨ *фр.* ⟨ *ғәр.*] *и. ҡар.* **йәйрән.**

**ГАЗЕ́ТА** [рус. ⟨ *ит.*] *и.* Көндәлек ваҡиға һәм яңылыҡтар баҫыла торған ваҡытлы матбуғат. *Газета редакцияһы. Газета мәҡәләһе. Газета таратыу. Газета алдырыу. Газетаға яҙылыу.* ■ *Зиләне мәктәп комсомол ойошмаһының сатира газетаһына дегәнәк итеп төшөрөп ҡуйғайнылар.* З. Биишева.

♦ **Стена газетаһы** стенаға элеп ҡуйыла торған ҡулъяҙма газета. *Фәхри булмә ишеген асып ингәндә, уның иптәштәре ҙур өҫтәлде уратып, стена газетаһы сығаралар ине.* Б. Ишемғол.

**ГАЗЕТСЫ** *и.* **1.** Газета редакцияһы хеҙмәткәре. *Ҙур әйберҙәр яҙмайым. Бер үк ваҡытта көндәлек корреспондент һәм газетсы эштәре күп ваҡытты ала.* М. Кәрим.

**2.** Газета һатыусы.

**ГА́ЗИК** [*рус.*] *и. һөйл.* «Газ» маркалы автомобиль.

**ГАЗИФИКА́ЦИЯ** [*рус.*] *и.* **1.** Ҡаты яғыулыҡтың (утын, күмер һ. б.) яна торған газға әйләндерелеүе.

**2.** Промышленность һәм торлаҡ йорттарының яна торған газ менән тәьмин ителеүе.

**ГАЗЛАНДЫРЫУ** *к. кар.* **газлау.**

**ГАЗЛАНЫУ** *к. төш. кар.* **газлау.** *Газланган һыу.*

**ГАЗЛАУ** *к.* **1.** Шыйыҡлыҡты газ [1] менән туйындырыу. *Ҡымыҙҙы газлау. Һыуҙы газлау.*

**2.** Газ менән ағыулау. *Һауаны газлауга ҡаршы көрәш.*

**ГАЗЛЫ** *с.* **1.** Газы [1] булған. *Газлы баллон.* / Газ [1] менән тәьмин ителгән, газ индерелгән (йорт һ. б. ҡарата).

**2.** Газ [1] ҡатнаштырылған. *Газлы эсемлек.*

**3.** Газ [2] менән ағыуланған. *Газлы һауа.*

**ГАЗОВИ́К** [*рус.*] *и. һөйл. кар.* **газсы** 1.

**ГАЗОВЩИ́К** [*рус.*] *и. кар.* **газсы** 2.

**ГАЗОГЕНЕРА́ТОР** [*рус.*] *и.* Ҡаты йәки шыйыҡ яғыулыҡты газға әйләндерә торған аппарат.

**ГАЗО́ЙЛЬ** [*рус.* ⟨*ингл.*] *и. махс.* Дизелдәрҙә яғыулыҡ итеп ҡулланыла торған нефть майы. *Газойль һәм соляр майы ауыр дизелдәр өсөн яғыулыҡ итеп файҙаланыла.* Д. Бураҡаев.

**ГАЗОЛИ́Н** [*рус.* ⟨*фр.* ⟨*лат.*] *и.* Нефттән ҡыуыу юлы менән алынған шыйыҡ яғыулыҡ.

**ГАЗОМЕ́Р** [*рус.*] *и.* Торбанан үткән газды [1] (2 мәғ.) үлсәү приборы; газ үлсәгес.

**ГАЗО́МЕТР** [*рус.*] *и.* Лабораторияла төрлө газды [1] йыйыу, һаҡлау һәм күләмен үлсәү өсөн ҡулланылған һауыт.

**ГАЗО́Н** [*рус.* ⟨*фр.*] *и.* Баҡса, урам, йорт буйына сәсеп үҫтергән үләнле, сәскәле ер. *Газондарҙа сибәр ҡыҙға оҡшап, резедалар сәскә атҡандар.* А. Игебаев.

**ГАЗОПРОВО́Д** [*рус.*] *и.* Алыҫҡа газ [1] ебәреү өсөн үткәрелгән торбалар. *Бохара — Урал газопроводы.*

**ГАЗОСВА́РЩИК** [*рус.*] *и.* Газ [1] (2 мәғ.) уты менән металды иретеп йәбештереүсе. *Газосварщик битлеге. Газосварщик булып эшләү.*

**ГАЗОТУРБИ́НА** [*рус.*] *и.* Газ [1] (2 мәғ.) ярҙамында эшләй торған двигатель. *Авиация гигант аҙымдар менән үҫте. Хәҙер һауала газотурбиналы машиналар оса.* «Совет Башҡортостаны», 1974, 30 апрель.

**ГАЗСЫ** *и.* **1.** Газ промышленносындағы эшсе.

**2.** Газификацияла (2 мәғ.) эшләүсе эшсе; газ ҡорамалдарын ҡарап, йүнәтеп йөрөгән эшсе.

**ГАЗҺЫҘЛАНДЫРЫЛЫУ** *к. төш. кар.* **газһыҙландырыу.**

**ГАЗҺЫҘЛАНДЫРЫУ** *к.* Зарарлы газ менән ағыуланған ерҙе зарарһыҙландырыу.

**ГАЙДАМА́К** [*рус.* ⟨*пол.*] *и. тар.* **1.** 17—18 быуаттарҙа поляк алпауыттарына ҡаршы баш күтәргән украин казағы.

**2.** Граждандар һуғышы ваҡытында, 1918—1920 йылдарҙа украин буржуаз милләтселәр ғәскәрендә йөрөгән кеше.

**ГАЙДУ́К** [*рус.* ⟨*вен.*] *и. тар.* 15—19 быуаттарҙа көньяҡ славяндарҙа төрөк хакимлегенә ҡаршы көрәштә ҡатнашыусы.

**ГА́ЙКА** [*рус.*] *и.* Винт, болт кеүек һырлы нәмәләргә бороп индерелә торған төрлө формалағы деталь; шөрөптөң алынмалы башы. *Гайканы бороу. Гайканы бушатыу. Гайканы нығытыу.* ■ *Әхмәт машинаһының тәгәрмәсен кейҙереп, гайкаларын ғына нығытып тора ине.* Ш. Янбаев.

**ГАЙМОРИ́Т** [*рус.* ⟨*ингл.*] *и. мед.* Танау төбөндә ике яҡлап урынлашҡан ҡыуышлыҡ тиресәһенең шешеүе.

**ГАЛА́КТИКА** [*рус.* ⟨*гр.*] *и.* Бергә тупланған йондоҙҙар системаһы. *Галактика томанлыҡтары.*

**ГАЛА́НКА** [*рус.* голландка] *и. һөйл.* Ғәҙәттә кафелдән һалынған мейес. *Галанка сығарыу. Галанка һалыу.*

**ГАЛАНТЕРЕ́Я** [*рус.* ⟨*фр.*] *и.* Көнкүрештәге ваҡ-төйәк нәмәләр, төймә, таҫма, селтәр, тараҡ, сумка, галстук п. б.). *Галантерея магазины.*

**ГАЛЕ́РА** [*рус.* ⟨*ит.*] *и. тар.* 18 быуатҡа тиклем ҡулланылған күп ишкәкле ҙур хәрби кәмә.

**ГАЛЕРЕ́Я** [*рус.* ⟨*ит.*] *и.* **1.** Ике бинаны тоташтырған коридор һымаҡ оҙон бүлмә. *Ике гәйәт ҙур корпустың икенсе ҡаттары оҙон галерея менән тоташа.* «Совет Башҡортостаны», 1969, 22 октябрь.

**2.** Шахта, хәрби нығытма кеүек нәмәнең ике өлөшөн тоташтырған ер аҫты юлы. *Галереянан йөрөү.*

**3.** Театрҙағы иң юғары ярус. *Галереяла ултырыу.*

**4.** Сәнғәт әҫәрҙәрен, картиналарҙы күрһәтеү өсөн ҡуя торған махсус бина; художестволы музей. *Дрезден галереяһы.*

**5.** *күсм.* Ниҙеңдер теҙмәһе. *Имашевтың Юлайы, Зәйтүнә Бикбулатованың Айһылыуы, Бәҙәр Йосоповандың Үлмәҫбикәһе — былар ҡабатланмаҫ образдар галереяһы.* «Ағиҙел», 1968, № 5.

**ГАЛЕ́РКА** [*рус.*] *и. һөйл. кар.* **галерея** 3.

**ГАЛЕТ** [*рус.* галета ⟨*фр.*] *и.* Йоҡа ғына итеп ҡатырып бешергән бәләкәй генә сөсө икмәк.

**ГАЛИФЕ́** [*рус.* ⟨*фр.*] *и.* Янбашы киң, балтыры тар итеп тегелгән салбар. *Ҡорбанов .. аяғына ялтыр итек, өҫтөнә һоро френч менән зәңгәр галифе кейгәйне.* Б. Бикбай.

**ГА́ЛЛИЙ** [*рус.* ⟨*лат.*] *и.* Химик элемент, күкшел аҡ төҫтәге һирәк осрай торған йомшаҡ металл.

**ГАЛЛО́Н** [*рус.* ⟨*ингл.*] *и.* Великобритания, Америка Ҡушма штаттары һәм ҡайһы бер башҡа илдәрҙә бөртөклө һәм шыйыҡ нәмәләр үлсәү берәмеге.

**ГАЛЛЮЦИНА́ЦИЯ** [*рус.* ⟨*лат.*] *и.* Мейе эшмәкәрлеге зарарланыу сәбәпле һиҙеү органдарының (ишетеү, күреү, тәм тойоу, һиҙеү һ. б.) яңылышыуы. *Галлюцинация — бөтөнләй юҡ нәмәне бар итеп ҡабул итеү, тойоу була. Ауырыу кеше тыҙға яҙмаған нәмәләр ишетә, күрә, тоя башлай.* Н. Ғатауллин.

**ГАЛОШ** [*рус.* галоша ⟨*фр.*] *и. кар.* **калуш.**

**ГА́ЛСТУК** [*рус.* ⟨*нем.*] *и.* Тамаҡ аҫтына төйөн яһап, муйынға кейә торған таҫма һымаҡ бау; муйын бауы. *Ирҙәр галстугы. Галстук тағыу.*

◆ **Ҡыҙыл галстук** *йәки* **пионер галстугы** пионерҙар билдәһе итеп муйынға бәйләй торған өс мөйөшлө ҡыҙыл сепрәк.

**ГАЛЬВАНИЗА́ЦИЯ** [*рус.*] *и.* Даими электр тогының техникала һәм медицинала ҡулланылыуы.

**ГАЛЬВАНО́МЕТР** [*рус.*] *и.* Көсө әҙ электр тогын үлсәй торған прибор.

**ГАЛЬВАНОТЕ́ХНИКА** [*рус.*] *и.* Электрохимияның төрлө ҡатышмаларҙан металды электр тогы ярҙамында айырып алыу мәсьәләләрен тикшергән бүлеге.

**ГАЛЬЯ́Н** [*рус.* гольян] *и. кар.* **серәй.**

**ГАМАДРИ́Л** [*рус.* ⟨*лат.*] *и.* Павиандар төркөмөнә ҡараған иң ҙур маймыл.

**ГАМА́К** [*рус.* ⟨*фр.*] *и.* Саф һауала ял итеү өсөн бауҙан үреп яһалған сәңгелдәк.

**ГАМАШ** [*рус.* гамаши ⟨*фр.*] Башһыҙ йылы ойоҡ, йылы ҡуныс.

**ГА́ММА** [1] [*рус.* ⟨*гр.*] *и.* **1.** Бер октава эсендә юғарыға йә түбәнгә табан билдәле тәртип менән бер-бер артлы килгән тауыш теҙмәһе. *Музыка белгестәренә эш етерлек: ҡурайҙан сыҡҡан тауыш төрҙәрен тикшереү һәм гаммаға һалыу — уларҙың эше.* Ғ. Сөләймәнов.

**2.** *күсм.* Асылы бер булып та, нимә менәндер айырылып торған күренештәр, сифаттар теҙеме. *Буяуҙар гаммаһы.* ■ *Күҙ яуын алып торған меңмең гаммалы гөл баҡсаһы күҙ алдына килә.* «Ағиҙел», 1966, № 12.

**ГА́ММА** [2] [*рус.* ⟨ *гр.*]: **гамма нурҙар** *физ.* төрлө ядро процестары ваҡытында барлыҡҡа килеүсе бик ҙур йышлыҡтағы электромагнитик тирбәлеүҙәр.

**ГАНГРЕ́НА** [*рус.* ⟨ *гр.*] *и.* Ҡан йөрөшө боҙолоу арҡаһында булған тәндәге бер ағзаның биологик туҡымаһының сереүе.

◆ **Газ гангренаһы** анаэроб бактерияһы менән ағыуланған ярала барлыҡҡа килгән ҡаты ауырыу.

**ГА́НГСТЕР** [*рус.* ⟨*ингл.*] *и. кит.* АҠШ һ. б. ҡайһы бер илдәрҙәге бандиттар шайкаһы ағзаһы.

**ГАНДБО́Л** [*рус.* ⟨*ингл.*] *и.* Тупты ҡул менән бәреп уйнай торған спорт уйыны. *Гандбол уйнау.* ■ *Спорттың мауыҡтырғыс бер төрө булған гандбол — ҡул тубы уйыны һәр кемде физик яҡтан сыныҡтыра.* М. Дилмөхәмәтов.

**ГАНТЕ́ЛЬ** [*рус.* ⟨ *нем.*] *и.* Ҡулды сыныҡтырыу өсөн ҡулланыла торған ике башы тупалсаҡ, уртанан тотмалы гимнастик ҡорал.

**ГАОЛЯ́Н** [*рус.* ⟨ *кыт.*] *и. шул уҡ* **ҡытай тарыһы** (*кар.* **тары**).

**ГАРА́Ж** [*рус.* ⟨*фр.*] *и.* Төрлө машиналарҙы ремонтлау һәм һаҡлау өсөн эшләнгән махсус ҡоролма. *Шәхси гараж. Гараж мөдире. Гараж һалыу.* ■ *Автотранспорт контораһының Иглин гаражы коллективы .. ауыл төҙөлөштәренә йөк ташыу планын үтәне.* Й. Солтанов.

**ГАРА́НТИЯ** [*рус.* ⟨ *фр.*] *и.* Әйткән һүҙ, эшләнгән эш өсөн алған яуаплылыҡ йөкләмәһе. *Гарантия срогы. Гарантия менән һатыу. Гарантия менән йүнәтеү.* ■ *Завод йәки фабрика .. срок ҡуйып, үҙ тауарының боҙолмай эшләүенә гарантия бирә.* «Совет Башҡортостаны», 1965, 14 март. / Ниҙеңдер уңышына ышаныс биргән шарт. *Ныҡышмалы эш — уңышҡа гарантия булып тора.*

**ГАРАНТИЯЛАНЫУ** *ҡ. ҡайт. кар.* **гарантирлау.** *Башҡорт АССР-ы граждандарына шәхестең тейелмәҫлеге гарантиялана.* Башҡорт АССР-ының Конституцияһы, 1984.

**ГАРАНТИЯЛАУ** *ҡ.* Гарантия менән нығытыу, ышаныслы итеү.

**ГАРАНТИЯЛЫ** *с.* Гарантия менән нығытылған, гарантия бирелгән. *Гарантиялы договор. Гарантиялы сәғәт.* ■ *Колхозсыларҙың хеҙмәтенә гарантиялы түләү .. игенселәр күңеленә яҡшы йоғонто яһаны.* «Совет Башҡортостаны», 1976, 9 август.

**ГАРДЕРО́Б** [*рус.* ⟨*фр.*] *и.* **1.** Кейем шкафы. *Гардероб ҡапҡасы. Гардеробҡа элеү.*

**2.** Йәмәғәт йорттарындағы кейем элә торған махсус урын. *Гардероб хеҙмәтсеһе.*

**ГАРДЕРОБСЫ** *и.* Гардеробта (2 мәғ.) эшләгән кеше, гардероб хеҙмәтсеһе.

**ГАРДИН** [*рус.* гардина ⟨*нем.*] *и.* Тәҙрәне тотош ҡаплай торған ҡорма. *Гардин элеү.*

**ГАРЕ́М** [*рус.* ⟨ *гәр.*] *и. кар.* **һәрәм.**

**ГАРМОНИК** *с.* Килешле, ярашлы. *Физик хеҙмәт кешенең гармоник үҫеше өсөн кәрәк.*

**ГАРМО́НИЯ** [*рус.* ⟨ *гр.*] *и.* **1.** Үҙ-ара ярашлы, килешле бәйләнеш. *Тәбиғәттәге гармония.*

**2.** Төрлө тауыштың матур, аһәңле яңғырашы. / Музыка теорияһының аккорд төҙөлөшөн өйрәнгән бүлеге.

**ГАРМОНИЯЛАШЫУ** *ҡ.* Килешеү, ярашыу.

**ГАРМУН** [*рус.* гармонь] *и.* Баҫмаҡлы, күрекле музыка ҡоралы. *Гармун күреге. Гармун тауышы. Гармун уйнау.* ■ *Байназар гармун күреген кирә тартып уйнап ебәрҙе.* Б. Бикбай. *Дәртләнеп, йырлап егеттәр, тарттылар гармундарын.* Ш. Бабич. **Гармун теле** гармундың баҫып көй сығара торған пластинкалары. *Һанаһаң һанамаһаң да гармун теле ун ике* (Халыҡ йырынан). **Саратов гармуны** һуҙғанда бер төрлө, ҡыҫҡанда икенсе төрлө тауыш сығарған гармун. **Тальян гармун** тартҡанда ла, ҡыҫҡанда ла бер төрлө тауыш сығара торған гармун.

◆ **Ауыҙ гармуны** ауыҙға ҡуйып, өрөтөп өрә торған бәләкәй музыка ҡоралы. **Гармун итәк** *кар.* **итәк** 3.

**ГАРМУНСЫ** *и.* Гармун уйнаусы. *Гармунсы булыу. Гармунсы итеү.* ■ *Гармунсы гармун тауышы менән ауылды яңғырата.* Ғ. Хәйри.

**ГАРНИЗО́Н** [*рус.* ⟨ *фр.*] *и.* Даими йәки ваҡытлы бер ерҙә урынлашҡан ғәскәр. *Гарнизон командиры. Гарнизон казармаһы.*

**ГАРНИ́Р** [*рус.* ⟨*фр.*] *и.* Һурпаһыҙ ит, балыҡ кеүек ашамлыҡтың эргәһенә ҡушып һалына торған картуф, бутҡа, йәшелсә кеүек аҙыҡ. *Ҡурылған балыҡ .. ултыртылған, гарнирына әлеге ҡыяр, помидор теленгән.* Ф. Иҫәнғолов.

**ГАРНИТУ́Р** [*рус.* ⟨*фр.*] *и.* Бер төҫ, бер стилгә килтереп эшләнгән нәмәләр йыйымы. *Мебель гарнитуры.*

**ГАРПУ́Н** [*рус.* ⟨ *гол.*] *и.* Эре диңгеҙ балыҡтарын йәки йәнлектәрен алыҫтан бәреп сәнсеп ала торған баулы һөңгө. **Гарпун тубы** гарпун ырғыта торған механизм.

**ГАРПУНСЫ** *и.* Гарпун ташлаусы, гарпун атыусы.

**ГА́РУС** *и. кар.* **гәрез.**

**ГАСТРИ́Т** [*рус.* ⟨ *гр.*] *и. мед.* Ашҡаҙандың лайлалы тиресәһе шешеү ауырыуы. *Хроник гастрит.*

**ГАСТРОЛЁР** [*рус.*] *и.* **1.** Гастролдә йөрөгән артист.

**2.** *һөйл.* Урын алмаштырып күп йөрөгән кеше.

**ГАСТРО́ЛЬ** [*рус.* ⟨ *нем.*] *и.* Ситтән килгән артист йәки театр труппаһының сығышы. *Гастролгә сығыу. Гастролгә китеү.* ■ *Башҡорт халыҡ бейеүҙәре ансамбле Африка илдәрендә оҙаҡ ваҡытлы гастролдә булды.* Р. Шәкүр.

**ГАСТРОНО́М** [*рус.* ⟨ *фр.*] *и.* Ҙур аҙыҡ-түлек магазины.

**ГАСТРОНО́МИЯ** [*рус.* ⟨ *фр.*] *и.* Сифатлы итеп әҙерләнгән аҙыҡтарҙың дөйөм атамаһы. *Гастрономия магазины.*

**ҒА́УБИЦА** [*рус.* ⟨ *нем.*] *и.* Текә ата торған уртаса көбәкле артиллерия ҡоралы.

**ГАУПТВА́ХТА** [*рус.* ⟨ *нем.*] *и.* Хәрбиҙәрҙе ареста тота торған бина. *Гауптвахталағы дөйөм камерала утыҙ һалдат .. ята.* А. Таһиров.

**ГАҺ** [*фарс.*] *и. иҫк. кит.* **1.** Әле, ҡайсаҡ. *Гаһ ваҡыт.*

**2.** Урын. *Мәкәрйә үҙәрә бер күперүк ирер аһ! Ушал күперүк «сират» атлыг ҡәҙәр гаһ.* М. Ғафури.

**ГАШЕ́ТКА** [*рус.* ⟨ *фр.*] *и.* Атыу ҡоралдарында тәтене ысҡындыра торған ырғаҡ. *Кулиев .. пулемёт гашеткаһын баш бармаҡтары менән баҫты. Тынған пулемёт тағы ата башланы.* Б. Дим.

**ГАШИ́Ш** *и. ҡар.* **хәшиш.**

**ГВАРДЕ́ЕЦ** [*рус.*] *и.* Гвардия часында хеҙмәт иткән һалдат. *Десна йылғаһын бик уңышлы кисеп, Черниговка төньяҡ һәм көнбайыштан башҡорт атлы гвардеецтары килеп инде.* Ә. Ихсан.

◆ **Аҡ гвардеец** аҡ гвардия һалдаты. **Ҡыҙыл гвардеец** ҡыҙыл гвардия һалдаты.

**ГВА́РДИЯ** [*рус.* ⟨ *ит.*] *и.* **1.** Ғәскәрҙең һуғышта танылған иң һәйбәт частары. *Башҡорт дивизияһына Волга ярҙарындағы һуғыштарҙа һәм дошман тылында күрһәткән батырлығы, ҡыйыулығы өсөн гвардия исеме бирелде.* «Совет Башҡортостаны», 1965, 6 май.

**2.** *күсм.* Эш, көрәштә алдын барған кешеләр. *Йәш гвардия. Ленинсы гвардия.* ■ *[Имай Насыриҙе] башҡорт совет әҙәбиәтенә нигеҙ һалған гвардияның тәүге һалдаттарының береһе тип әйтеп була.* К. Мәргән.

◆ **Аҡ гвардия** 1918—1920 йылдарҙа граждандар һуғышында ҡатнашҡан контрреволюцион ғәскәрҙәрҙең дөйөм исеме. **Ҡыҙыл гвардия** эшселәрҙең 1917—1918 йылдарҙа большевиктар партияһы тарафынан ойошторолған ҡоралды отряды.

**ГЕГЕЛСЕ** *и.* Гегель философияһы яҡлы кеше.

**ГЕГЕЛСЕЛЕК** *и.* Идеалистик диалектика теорияһын эшләгән немец философы Гегель тәғлимәте нигеҙендә барлыҡҡа килгән философик йүнәлештең атамаһы.

**ГЕГЕМО́Н** [*рус.* ⟨ *гр.*] *и. кит.* Еткәсе көс; юлбашсы.

**ГЕГЕМО́НИЯ** [*рус.* ⟨ *гр.*] *и. кит.* Бер синыф йә хөкүмәттең икенсе синыф йәки хөкүмәткә ҡарата булған өҫтөнлөгө, етәкселек урыны. *Пролетариат гегемонияһы.*

**ГЕ́ЙЗЕР** [*рус.* ⟨ *исл.*] *и. ҡар.* **ғәйсәр.**

**ГЕКСАХЛОРА́Н** [*рус.*] *и.* Ауыл хужалығында зарарлы бөжәктәрҙе ҡырыу өсөн ҡулланылған органик берләшмә.

**ГЕКСА́ЭДР** [*рус.* ⟨ *гр.*] *и. мат.* Алты ҡырлы геометрик есем.

**ГЕКТАР** [*рус.* ⟨ *фр.*] *и.* Метрик системаның 10000 кв. метрға тиң булған ер үлсәү берәмеге. *Гектар башына 30 центнер иген алыу.* ■ *Һәр гектар йүкә урманынан уның бал бирә торған дәүерендә 100 мең һумлыҡ бал һәм балауыҙ алырға мөмкин.* М. Хисмәтов. *Башҡортостанда 6 миллион гектарҙан ашыу урман бар.* «Совет Башҡортостаны», 1975, 21 август.

**ГЕКТАРЛАУ** *ҡ.* Гектары-гектары менән үлсәү. *Гектарлап бүлеү. Гектарлап өләшеү.*

**ГЕКТАРЛЫҠ** *с.* Күпмелер гектарҙан торған. .. *Совхоздың Биләп бүлексәһенең үр яғында 100 гектарлыҡ һыубаҫар майҙан бар.* Д. Мәһәҙиев. / Күпмелер гектарға етерлек. *100 гектарлыҡ орлоҡ.*

**ГЕКТО́ГРАФ** [*рус.* ⟨ *гр.*] *и.* Яҙыуҙы йәки һүрәтте күсереп күбәйтә торған ябай ҡорамал. *Гектографта баҫылған китап.*

**ГЕЛ** [*ғәр.*] *р.* **1.** Һәр ваҡыт. *Гел булыу. Гел шулай.* ■ *Тыуған-үҫкән илемдән яҙмышым йыраҡ ташлаһа, һеҙҙе һағынып .. төшөмдә һеҙҙе гел күрәм.* Салауат Юлаев. *Нисек ышанаһың дарьяға? Гел тулҡынлана ул, гел аға.* М. Кәрим.

**2.** Бөтә барлығы менән, тотош. *Район үҙәге .. гел бер төҫлө ваҡ ҡына ағас йорттарҙан тора.* М. Тажи.

● *Бер алдаған гел алдар.* Әйтем.

**ГЕЛЕ-ГЕЛЕ** *саҡр.* Ҡаҙҙы саҡырғанда әйтелә.

**ГЕ́ЛИЙ** [*рус.* ⟨ *гр.*] *и.* Химик элемент, водородтан ҡала иң еңел, төҫһеҙ, еҫһеҙ инерт газ.

**ГЕЛИО́ГРАФ** [*рус.* ⟨ *гр.*] *и.* **1.** *астр.* Ҡояшты төшөрөп ала торған фотоаппаратлы телескоп.

**2.** *метеор.* Көн эсендә ҡояштың яҡтыртҡан ваҡытын иҫәпләп яҙа торған автоматик ҡорамал.

**3.** *хәрби* Алыҫҡа яҡтылыҡ сигналы бирә торған прибор.

**ГЕЛИОТЕРАПИ́Я** [*рус.*] *и.* Ҡояш нурҙары менән дауалау ысулы.

**ГЕЛИОТЕ́ХНИКА** [*рус.*] *и.* Техниканың ҡояш энергияһын файҙаланыу эше менән шөғөлләнгән бүлеге.

**ГЕЛИОЦЕНТРИ́ЗМ** [*рус.* ⟨ *гр.* ⟨ *лат.*] *и.* Йыһандың үҙәгендә Ҡояш тора, планеталар уның тирәһендә әйләнә, тип ҡараған тәғлимәт.

**ГЕЛИОЦЕНТРИК** *с.* Гелиоцентризмға нигеҙле. *Гелиоцентрик система. Гелиоцентрик орбита буйлап осоу.*

**ГЕЛҮК** *и. диал. ҡар.* **нар** [2].

**ГЕЛЬМИ́НТ** [*рус.* ⟨ *гр.*] *и.* Кешенең, хайуандың эске ағзаларында һәм тәнендә, шулай уҡ үҫемлектәрҙә була торған төрлө паразит селәүсен (ҡылйылан, бабасыр һ. б.).

**ГЕЛЬМИНТО́З** [*рус.* ⟨ *гр.*] *и.* Паразит селәүсендәр арҡаһында кеше һәм хайуандарҙа барлыҡҡа килә торған ауырыу. *Гельминтоз ауырыуы кеше организмының гельминттар менән зарарланыуынан килә.* «Совет Башҡортостаны», 1970, 6 июнь.

**ГЕЛЬМИНТО́ЛОГ** *и.* Гельминтология буйынса белгес.

**ГЕЛЬМИНТОЛО́ГИЯ** [*рус.* ⟨ *гр.*] *и.* Паразит селәүсендәр һәм улар тыуҙырған ауырыуҙар тураһындағы фән.

**ГЕЛӘН** *р. кар.* **гел.**

**ГЕМАТОГЕ́Н** [*рус.* ⟨ *гр.*] *и.* Эре мөгөҙлө малдың ҡанынан әҙерләнә торған дауалау препараты (ҡанда гемоглобин әҙәйгәндә, ныҡ ябыҡҡанда ҡулланыла).

**ГЕМАТО́ЛОГ** [*рус.*] *и.* Гематология буйынса белгес.

**ГЕМАТОЛО́ГИЯ** [*рус.* ⟨ *гр.*] *и.* Ҡанды һәм уның сирҙәрен тикшерә торған фән.

**ГЕМОГЛОБИ́Н** [*рус.* ⟨ *лат.*] *и.* Ҡыҙыл ҡан бөртөксәләренең кислородты үҙенә һеңдереп тәнгә тарата торған матдәһе.

**ГЕМОРРАГИК: геморрагик тапма** *и. мед.* бер яндырып, бер өшөттөрөп яфалаған, тире аҫтына һәм эске ағзаларға ҡан һауҙырған ауырыуҙарҙың дөйөм исеме.

**ГЕМОРРО́Й** [*рус.* ⟨ *гр.*] *и. мед.* Тура эсәктең түбәнге өлөшөндәге ҡан тамырҙары киңәйеп, ҡан төйөлөүҙән, ҡан тамырҙары шартлауҙан ғибәрәт ауырыу.

**ГЕН** [*рус.* ⟨ *гр.*] *и. биол.* Йән эйәләре һәм үҫемлек организмындағы сифатты нәҫелдән-нәҫелгә күсерә торған элемент. *Нәҫелдән-нәҫелгә сир үҙе түгел, ә ауырыуға сәбәпсе булған ген күсә.* Ә. Мифтахова.

**ГЕНЕАЛОГИК** *с.* Генеалогияға мөнәсәбәтле. *Шәжәрә билдәле бер ырыу йәки ҡәбиләнең генеалогик яҙмаһы рәүешендә барлыҡҡа килгән.* Ә. Харисов.

**ГЕНЕАЛО́ГИЯ** [*рус.* ⟨ *гр.*] *и.* **1.** Нәҫелдең бер-бер артлы килгән быуындар тарихы. *Шәжәрәлә ғаиләнең генеалогияһы, ауылдың тарихы, ундағы ырыуҙар, ырыуҙарҙың сығышы теркәлгән.* «Ағиҙел», 1966, № 3. / Тарихтың нәҫел-ырыуҙар сығышын тикшергән бүлеге.

**2.** Хайуан һәм үҫемлек ғаиләләренең сығышы.

**ГЕ́НЕЗИС** [*рус.* ⟨ *гр.*] *и.* Барлыҡҡа килеш; сығыш. *Башҡорт теленең генезисы.* ■ *И. М. Губкин .. Төньяҡ Кавказдағы нефть ятыштарының генезисын .. өйрәнә.* «Совет Башҡортостаны», 1965, 21 сентябрь.

**ГЕНЕРА́Л** [*рус.* ⟨ *лат.*] *и.* Юғары хәрби дәрәжә һәм шул дәрәжәләге кеше. *Генерал булыу.* **Армия генералы** иң юғарғы генерал дәрәжәһе. **Генерал-майор** беренсе баҫҡыс генерал дәрәжәһе һәм шул дәрәжәләге кеше. *Осрашыу тантанаһын республиканың хәрби комиссары генерал-майор Таһир Кусимов аса.* Ә. Ихсан. **Генерал-лейтенант** икенсе баҫҡыс генерал дәрәжәһе һәм шул дәрәжәләге кеше. **Генерал-полковник** өсөнсө баҫҡыс генерал дәрәжәһе һәм шул дәрәжәләге кеше. *Яҡташыбыҙ Ғәниев ябай һалдаттан генерал-полковник дәрәжәһенә етеп, тиҫтәнән артыҡ орден һәм миҙал* алған. «Совет Башҡортостаны», 1967, 24 февраль.

**ГЕНЕРА́Л-ГУБЕРНА́ТОР** [*рус.*] *и.* Революцияға тиклемге Рәсәйҙә һәм ҡайһы бер буржуаз илдәрҙәге губерна йә край башында торған хәрби-административ етәксе.

**ГЕНЕРАЛИ́ССИМУС** [*рус.* ⟨ *лат.*] *и.* Ҡайһы бер илдәрҙә күрһәткән хеҙмәте өсөн ғәскәри кешегә бирелгән иң юғары хәрби дәрәжә һәм шул дәрәжәләге кеше. *Генералиссимус Суворов.*

**ГЕНЕРАЛИТЕ́Т** [*рус.* ⟨ *нем.*] *и. йыйн.* Армияның иң юғарғы командирҙар составы; генералдар.

**ГЕНЕРАЛЬ** [*рус.* генеральный] *с.* **1.** Баш, төп, иң өҫтөн, етәксе. *Генераль прокурор. Генераль секретарь.* ■ *Беҙҙең алдыбыҙҙа яңынан-яңы юлдар асылыр һәм һәр ваҡыт генераль линия булып Ленин партияһының линияһы [торор].* «Ағиҙел», 1965, № 1.

**2.** Бөтә яҡты ла эсенә алған, төплө, хәл иткес. *Генераль план.*

◆ **Генераль штаб** хәрби идаралыҡтағы юғарғы орган.

**ГЕНЕРА́ТОР** [*рус.* ⟨ *лат.*] *и.* Механик энергияны электр энергияһына әйләндерә торған машина. *Турбиналар үҙҙәренең хәрәкәтен генераторҙарға бирә. [Генераторҙар] электр тоғы эшләп сығара.*

**ГЕНЕ́ТИК** [*рус.*] *и.* Генетика өлкәһендә эшләгән белгес.

**ГЕНЕТИ́К** *с.* **1.** Генезисҡа мөнәсәбәтле. *Генетик бәйләнеш. Генетик метод.*

**2.** Генетикаға мөнәсәбәтле. *Генетик үҙенсәлектәр.*

**ГЕНЕ́ТИКА** [*рус.* ⟨ *гр.*] *и.* Организмдың нәҫелдән нәҫелгә күсеүсәнлек һәм үҙгәреүсәнлек закондарын өйрәнә торған фән. *«Ғүмер схемаһының» үҙгәрешен генетика билдәләй. Гендар үҙҙәрен солғап алған шартҡа яраҡлашыу үҙенсәлегенә эйә.* Ә. Мифтахова.

**ГЕНИАЛЬ** [*рус.* гениальный] *с.* **1.** Юғары һәләткә, оло аҡылға эйә; даһи. *Гениаль кеше. Гениаль яҙыусы. Марксизмдың гениаль теоретигы В. И. Ленин.*

**2.** Юғары һәләт, оло аҡыл емеше булған. *Гениаль әҫәр. Гениаль асыш. Гениаль хеҙмәт.*

**ГЕ́НИЙ** [*рус.* ⟨ *лат.*] *и. кит.* **1.** Юғары һәләт, оло аҡыл.

**2.** Шул һәләт һәм аҡылға эйә булған кеше; оло аҡыл эйәһе; даһи. // *Алдыбыҙға ҡуйҙыҡ маяҡ итеп .. гений Ленинды.* Х. Ғәбитов.

**ГЕНОТИ́П** [*рус.* ⟨ *гр.*] *и. кит.* Нәҫелдең булмышын, дауамлығын билдәләгән нигеҙ.

**ГЕНОЦИ́Д** [*рус.* ⟨ *гр.* + *лат.*] *и.* Айырым бер халыҡ төркөмөн милләтенә, расаһына, диненә ҡарап юҡ итеү сәйәсәте.

**ГЕНШТА́Б** [*рус.*] *и.* Генераль штаб (*кар.* **генераль**).

**ГЕНӘ** *киҫ. кар.* **ҡына**[2].

**ГЕОБОТА́НИКА** [*рус.*] *и.* Үҫемлектәрҙең таралыш һәм үҙгәрешен географик факторҙарға, тупраҡ һәм климат үҙсәнлектәренә бәйләп өйрәнә торған фән.

**ГЕО́ГРАФ** [*рус.*] *и.* География буйынса белгес. *Географтар ер өҫтөнөң икһеҙ-сикһеҙ киңлектәрен, диңгеҙ, тау, хайуан һәм үҫемлектәр донъяһын, уларҙың үҙ-ара мөнәсәбәтен өйрәнә.* «Совет Башҡортостаны», 1968, 16 июль.

**ГЕОГРАФИК** *с.* Географияға мөнәсәбәтле. *Географик асыш. Географик карта.* / Географияға бәйле рәүештә, ер өҫтө төҙөлөшөнән, тә-

биғәт шарттарынан сығып ҡаралған. *Европаның географик урыны бик уңайлы.*

**ГЕОГРА́ФИЯ** [*рус.* ⟨ *гр.*] *и.* **1.** Ер өҫтөн, ундағы тәбиғи шарттарҙы, халыҡтарҙың урынлашыуын һәм экономик сығанаҡтарҙы өйрәнә торған фәндәр комплексы. *География уҡытыусыһы. География картаһы.*

**2.** Ер йөҙөндә, йәки айырым бер урында нимәнең дә булһа таралыу күренешен өйрәнеү эше. *Лингвистик география. Тупраҡ географияһы. Үҫемлектәр географияһы.* **Физик география** ер өҫтөн һәм уның төҙөлөшөн өйрәнә торған фән. **Экономик география** ижтимағи производствоның ер йөҙөндәге таралышын, уның айырым ил йәки дәүләт шарттарында үҫеү үҙенсәлектәрен өйрәнә торған фән.

**ГЕОДЕЗИ́СТ** [*рус.*] *и.* Геодезия буйынса белгес. *Геодезистар партияһы.*

**ГЕОДЕ́ЗИЯ** [*рус.* ⟨ *гр.*] *и.* Ерҙең һәм ер өҫтөндәге айырым урындарҙың күләмен, формаһын өйрәнеп, шуларҙың майҙанын үлсәп планға һәм картаға төшөрөү менән шөғөлләнгән фән. *Геодезия ҡорамалдары.*

**ГЕО́ЛОГ** [*рус.*] *и.* Геология буйынса белгес. *Ерҙең бөтә үткән тарихын геологтар биш дәүергә: археозой, протерозой, палеозой, мезозой һәм кайнозой дәүерҙәренә булә.* Д. Бураҡаев.

**ГЕОЛОГИК** *с.* Геологияға мөнәсәбәтле. *Геологик асыш. Геологик партия. Геологик разведка. Геологик тикшеренеү.* / Ер тарихына, ер ҡатламдарының төҙөлөшөнә мөнәсәбәтле. *Ер шарының геологик дәүере.* ■ *Геология фәне боронғо геологик дәүерҙәрҙең оҙонлоғон абсолют һандар менән иҫәпләй ала.* Д. Бураҡаев.

**ГЕОЛО́ГИЯ** [*рус.* ⟨ *лат.*] *и.* Ер ҡатламдарының төҙөлөшөн, үҫешен, тарихын, ҡаҙылма байлыҡтар ятышын өйрәнә торған фән.

**ГЕОМЕТРИК** *с.* **1.** Геометрияға мөнәсәбәтле. *Геометрик аксиома.*

**2.** Өскөл, дүрткел кеүек төрлө схематик фигураларҙан ғибәрәт. *Геометрик орнамент.*

**ГЕОМЕ́ТРИЯ** [*рус.* ⟨ *гр.*] *и.* Математиканың арауыҡтағы формаларҙы һәм есемдәрҙең бербереһенә булған мөнәсәбәтен өйрәнә торған бүлеге. *Аналитик геометрия. Башланғыс геометрия. Һыҙма геометрия.*

**ГЕОМОРФОЛО́ГИЯ** [*рус.*] *и.* Ер өҫтө төҙөлөшөн өйрәнгән фән.

**ГЕОРГИ́Н** [*рус.*] *и.* Ҡатмарлы сәскәлеләр ғаиләһенә ҡараған, тамырынан үрсей торған эре сағыу сәскәле күп йыллыҡ баҡса гөлө. *Аҡ георгин. Ҡыҙыл георгин.*

**ГЕОФИ́ЗИК** [*рус.*] *и.* Геофизика буйынса белгес. *Йәш геофизиктар ике йыл иртә яҙҙан алып ҡара көҙгә тиклем яланда разведкала эшләнеләр.* Ш. Янбаев.

**ГЕОФИЗИ́К** *с.* Геофизикаға мөнәсәбәтле. *Геофизик прибор.*

**ГЕОФИ́ЗИКА** [*рус.*] *и.* Ерҙең физик үҙенсәлектәрен һәм ундағы физик үҙгәрештәрҙе өйрәнә торған фән. *Геофизика ҡорамалдары. Геофизика обсерваторияһы.*

**ГЕОХИ́МИК** [*рус.*] *и.* Геохимия буйынса белгес.

**ГЕОХИМИ́К** *с.* Геохимияға мөнәсәбәтле. *Руда ятҡылыҡтарының геохимик классификацияһы.*

**ГЕОХИ́МИЯ** [*рус.*] *и.* Ерҙең химик составын һәм ерҙәге химик элементтарҙың таралыу закондарын өйрәнә торған фән.

**ГЕПАТИ́Т** [*рус.* ⟨ *гр.*] *и. ҡар.* **һары** [2].

**ГЕР** [*рус.* гиря] *и.* **1.** Билдәле ауырлыҡта итеп, үлсәүгә ҡуйыр өсөн яһалған нәмә. *Бер килолыҡ гер. Йөҙ грамлыҡ гер. Гер менән үлсәү.* / Ауыр атлетикала: күнегеүҙәр яһау өсөн ҡулланылған спорт снаряды. *Гер күтәреү.*

**2.** Механизмды хәрәкәткә килтереү өсөн тағылған ауырлыҡ. *Сәғәт гере.* ■ *Уң яҡта ике герле, кәкүкле ҙур стена сәғәте...* Т. Хәйбуллин.

**ГЕРБ** [*рус.* ⟨ *пол.*] *и.* Дәүләт, ҡала, ижтимағи төркөмдөң рәсми тамғаһы. *БАССР Дәүләт гербы булып РСФСР-ҙың Дәүләт гербы һанала.* «Башҡорт АССР-ының Конституцияһы», 1984. *Кремль стенаһын СССР Дәүләт гербы һәм ун биш союздаш республика гербы биҙәп тора.* «Совет Башҡортостаны», 1969, 8 ноябрь.

**ГЕРБА́РИЙ** [*рус.* ⟨ *лат.*] *и.* Киптереп йыйылған үҫемлектәр коллекцияһы. *Гербарий яһау. Дарыу үләндәренән гербарий йыйыу.*

**ГЕРБИЦИ́Д** [*рус.* ⟨ *лат.*] *и. хим.* Ҡый үләндәрен бөтөрөү өсөн ҡулланыла торған химик препарат. *Гербицид һиптереү.*

**ГЕРБЛЫ** *с.* Герб төшөрөлгән. *Гербле мисәт. Гербле флаг.*

**ГЕРКУЛЕ́С** [*рус.* ⟨ *лат.*] *и.* **1.** Ныҡ көслө кешегә ҡарата әйтелә.

**2.** Махсус эшкәртелгән һоло ярмаһы. *Геркулес бутҡаһы.*

**ГЕРМАН** *и. һөйл.* **1.** Үҙәк, көнбайыш һәм көньяҡ-көнбайыш Европала йәшәгән боронғо ҡәбиләләрҙең дөйөм атамаһы.

**2.** *иҫк.* Немец.

♦ **Герман телдәре** Һинд-Европа телдәренә ингән бер төркөм ҡәрҙәш телдәр.

**ГЕРМЕТИЗА́ЦИЯ** [*рус.*] *и.* Ниҙеңдер һыу, һауа үтмәҫлек итеп көпләнеүе. *Герметизация яһау.*

**ГЕРМЕТИЗАЦИЯЛАНЫУ** *ҡ. төш. ҡар.* **герметизациялау.** *Һыуҙың радиактив торошо бер тапҡыр ҙа норманан артманы. .. Ауыл ерҙәрендә ҡоҙоҡтар герметизацияланды.* «Совет Башҡортостаны», 1986, 27 май.

**ГЕРМЕТИЗАЦИЯЛАУ** *ҡ.* Берәй аппарат, бина һ. б. стеналарын шыйыҡлыҡ һәм газ инмәҫлек итеп нығытып ҡуйыу.

**ГЕРМЕТИК** *с.* Һыу, һауа үтмәҫлек итеп көпләнгән. *Герметик кабина. Кипкән һөт герметик һауыттарға һалына.*

**ГЕРОИ́ЗМ** *и. кит.* Батырлыҡ. *Башҡорт кавалерия дивизияһы Донбаста дошман тылында тәрән рейдта тиңһеҙ героизм күрһәткән өсөн гвардия исеме алып сыҡ[ты].* Ә. Ихсан.

**ГЕРОИК** *с.* Батырҙарға хас, геройҙарса башҡарылған. *Героик көрәш.* ■ *Бөйөк Горький әйткәнсә, героик эш героик һүҙ талап итә.* Р. Янбулатова. / Батырлыҡтарға бай, геройҙарса эштәр менән данлы булған. *Героик үткәндәр. Героик тарих.* / Батырлыҡты данлаған, геройҙар тураһында һөйләгән. *Героик йыр. Героик эпос.*

■ *[Улар] .. эпик йырҙар әкиәткә хас сифаттарҙы ла эсенә алған риүәйәт характерындағы героик йөкмәткеле әҫәрҙәр.* Ә. Харисов.

**ГЕРО́ИКА** [*рус.*] *и.* Нимәнеңдер героик яғы; батырлыҡ, ҡаһарманлыҡ. *Башҡорт композиторҙары Ватан һуғышы героикаһын данлаған бик күп йыр яҙҙы.* «Ағиҙел», 1965, № 5.

**ГЕРОИ́НЯ** [*рус.*] *и.* Роман, пьеса, кино һ. б. әҫәрҙәрҙә төп урынды тотҡан ҡатын-ҡыҙ персонажы. *Яҙыусы үҙ героиняһын психологик яҡтан характерлауҙа ҙур оҫталыҡҡа ирешә.* М. Ғималова.

**ГЕРО́Й** [*рус.* ⟨ *гр.*] *и.* **1.** Батыр, ҡаһарман. *Бөйөк Ватан һуғышы геройы.*

**2.** Үҙ йәмғиәтенең юғары сифаттарын туплаған кеше. *Коммунизм төҙөүгә бөтә көсөн биргән кеше генә заманыбыҙҙың ысын геройы булып иҫәпләнергә хаҡлы.* «Совет Башҡортостаны», 1964, 30 апрель.

**3.** Роман, пьеса, кино һ. б. әҫәрҙәрҙә төп урынды тотҡан ир-ат персонажы. *Ыңғай герой. Кире герой. Лирик герой.* ■ *Юғалттым мин геройҙарымды, татыулаштыларымы ҡабаттан? Шуны белмәйем.* Ғ. Сәләм.

◆ **Герой ҡала** Бөйөк Ватан һуғышындағы ҙур батырлығы өсөн айырым ҡалаларға бирелгән исем. *Ленинград — герой ҡала.* **Герой әсә** ун йәки унда артыҡ бала тәрбиәләп үҫтергән ҡатын-ҡыҙға бирелә торған маҡтаулы исем. **Советтар Союзы Геройы** ҙур батырлыҡ, ҡаһармандыҡ күрһәткән хәрби кешегә бирелә торған маҡтаулы исем. *[Бөйөк Ватан һуғышында] ун бер меңдән артыҡ һуғышсыға Советтар Союзы Геройы тигән исем бирелде.* Т. Кусимов. **Социалистик Хеҙмәт Геройы** хеҙмәттә ҙур уңышҡа ирешкән кешегә бирелә торған маҡтаулы исем.

**ГЕРО́ЙҘАРСА** *р.* Геройҙар һымаҡ, батырҙарса, батыр рәүештә. .. *Пётр эшселәре .. икмәк өсөн, солох өсөн геройҙарса көрәш алып баралар.* Д. Юлтый.

**ГЕРО́ЙЛЫҠ** *и.* Батырлыҡтар эшләүгә булған һәләтлек, ҡурҡыуһыҙлыҡ, ныҡлыҡ; батырлыҡ. *Геройлыҡ күрһәтеү.* ■ *Ҡоро геройлыҡ менән генә дошманды еңеп булмай. Уны еңер өсөн белем дә кәрәк, оҫталыҡ та.* С. Мифтахов.

**ГЕРОНТО́ЛОГ** [*рус.*] *и.* Геронтология буйынса белгес. *Геронтологтарҙың мәғлүмәттәренә ҡарағанда, [оҙаҡ йәшәгән кешеләрҙең] барыһы ла тиерлек никахта торған.* «Совет Башҡортостаны», 1967, 19 апрель.

**ГЕРОНТОЛО́ГИЯ** [*рус.* ⟨ *гр.*] *и.* Ҡартайыу процесын һәм ғүмерҙе оҙонайтыу сараларын өйрәнә торған фән. *Грузиялағы геронтология үҙәгенең иҫәпләүенә ҡарағанда, оҙаҡ йәшәү өсөн диңгеҙ кимәленән 500—1500 метр бейеклектә урынлашҡан ер уңайлы икән.* «Совет Башҡортостаны», 1967, 19 апрель.

**ГЕРПЕТО́ЛОГ** [*рус.*] *и.* Герпетология буйынса белгес.

**ГЕРПЕТОЛО́ГИЯ** [*рус.* ⟨ *гр.*] *и.* Зоологияның ер-һыу хайуандарын һәм һөйрәлеүселәрҙе өйрәнә торған бүлеге.

**ГЕРЦ** [*рус.* ⟨ *нем.*] *и.* Тирбәлеш йышлығын үлсәү берәмеге.

**ГЕ́РЦОГ** [*рус.* ⟨ *нем.*] *и.* Көнбайыш Европалағы ҙур кенәздәрҙең, юғары дворяндарҙың титулы һәм шул титулдағы кеше.

**ГЕРЦОГИ́НЯ** [*рус.*] *и.* Герцогтың ҡатыны йәки ҡыҙы.

**ГЕСТА́ПО** [*рус.* ⟨ *нем.*] *и.* Фашистик Германияла булған йәшерен дәүләт полицияһы.

**ГЕСТАПОСЫ** *и.* Гестапола хеҙмәт итеүсе фашист. *Коммунист Фучик менән гестапосылар араһында инде йөҙгә-йөҙ, күҙгә-күҙ асыҡ көрәш башлана.* Н. Хафизов.

**ГЕ́ТМАН** [*рус.*] *и.* **1.** 16—17 быуаттарҙа Украинала булған ҡаҙаҡ ғәскәр башлығы. *Ҡаҙаҡ старшиналары үҙ араларынан гетман .. һайла[ғандар].*

**2.** 16—18 быуаттарҙағы Польша һәм Литва дәүләтенең ғәскәр башлығы.

**ГЕТР** [*рус.* гетры ⟨ *фр.*] *и.* Ботинка өҫтөнән кейә торған йылы аяҡ кейеме. *Гетр кейеү.*

**ГЕ́ТТО** [*рус.* ⟨ *ит.*] *и.* **1.** Урта быуатта Европа ҡалаларында еврейҙәр өсөн тәғәйенләнгән ҡала бисәтһе.

**2.** Ҡайһы бер капиталистик илдәрҙә дискриминацияға дусар ителгән түбән хоҡуҡлы халыҡтар өсөн тәғәйенләнгән ҡала биҫтәһе. *Негрҙар геттоһы.*

**ГЕҮ** *оҡш.* **1.** Туҡтауһыҙ бер төрлө генә булып сыҡҡан тонок тауышты белдергән һүҙ. *Молотилка геү килеп эшләй.* Б. Бикбай.

**2.** Күмәк кеше шаулашҡанда сыҡҡан тауышты белдергән һүҙ; шау. *Геү итеү. Геү килеү.*

**ГЕҮӘҺ** [*фарс.*] *и.* Бер-ике нәмәнең дөрөҫлөгөн күрһәткән кеше йәки дәлил; шаһит. *Геүәһ булыу.* ■ *Геүәһ булығыҙ, ҡарттар, ишетегеҙ, ана ҡалай яман һүҙ һөйләй.* М. Тажи. / Берәй нәмәнең дөрөҫлөгө тураһында дәлил биргән нәмә. *Ҡулымды яндырған шул күмер эшебеҙгә геүәһ булһынсы.* Салауат.

**ГЕҮӘҺЛӘНДЕРЕҮ** *к. ҡар.* **геүәһләтеү.**

**ГЕҮӘҺЛӘНЕҮ** *к.* 1. *төш. ҡар.* **геүәһләү.**

**2.** Дәлил нигеҙендә ышаныу.

**ГЕҮӘҺЛӘТЕҮ** *к.* Дөрөҫләтеү, раҫлатыу. *[Штигер:] Был зимагорҙың ни һөйләгәнен ишеттегеҙме,— тип, шунда уҡ геүәһләтеп та алды.* М. Ғафури.

**ГЕҮӘҺЛӘҮ** *к.* Дөрөҫләү, раҫлау.

**ГЕҮӘҺЛЕК** *и.* Шаһитлыҡ. *Тимерготло, Тамьян — ике батыр, ..Мәсем ханга килде былар. Тогролоҡ менән геүәһлек бирҙе былар: «Батыр Бабсаҡ үлтергән арыҫланды Ҡара Өкөнән бер көн борон күрҙек»,— тине. «Бабсаҡ менән Кусәк».*

**ГЕҮ-ГЕҮ** *оҡш.* Ҡабат-ҡабат геү иткән тауышты белдергән һүҙ. *Геү-геү итеү. Геү-геү килеү.*

**ГЕҮЕЛДӘТЕҮ** *к.* Геү-геү иттереү. *Машинаны геүелдәтеү.*

**ГЕҮЕЛДӘҮ** *к.* Геү-геү итеү, геү-геү иткән тауыш сығарыу. *Геүелдәп осоу.* ■ *Һауаларҙан осҡан самолёттың геүелдәйҙер ҡорос моторы* (Халыҡ йырынан).

**ГЕҮЕЛДӘШЕҮ** *к. урт. ҡар.* **геүелдәү.**

**ГЕҮЛӘТЕҮ** *к.* **1.** Геү иттереү. *Машинаны геүләтеү.*

**2.** *күсм.* Шау-гөр килтереү, күңелле, шәп итеү. *Донъяны геүләтеп, еңеү шатлығы килде. Геүлә-*

*теп донъя көтөү. Геүләтеп туй үткәреү. Геүләтеп йәшәү.* ■ *Бөтә ауыл менән геүләтеп Беренсе Май байрамын уҙғар[ҙыҡ].* Т. Баишев.

**ГЕҮЛӘҮ** *ҡ.* **1.** Геү итеү, геү килеү. *Бал ҡорттары геүләй. Геүләп осоу.* ■ *Оло юл буйлап теҙелгән телефон бағаналары туҡтауһыҙ геүләй.* Ш. Янбаев.

**2.** Геү итеп ныҡ шаулау. *Халыҡ геүләй.* ■ *Ҡарттар геүләп көй күтәрҙеләр.* Һ. Дәүләтшина.

**ГЕҮЛӘШЕҮ** *ҡ.* **1.** *урт. ҡар.* **геүләү.** *Машиналар геүләшә.*

**2.** Күмәкләп шаулау; шаулашыу. *Халыҡ геүләшеп кино көтә.* / *күсм.* Шат, матур итеп күңел асыу. *Геүләшеп ултырыу.*

**ГИАЦИНТ** [*рус.* ⟨ *гр.*] *и.* **1.** *ҡар.* **сөмбөл.**

**2.** Ҡыҙыл йәки һарғылт ҡыҙыл төҫтәге аҫыл таш. // *Гиацинт ҡашлы йөҙөк.*

**ГИББОН** [*рус.* ⟨ *ингл.*] *и.* Алғы аяҡ-ҡулдары ныҡ оҙон булған, кешегә оҡшаш маймыл.

**ГИБРИД** [*рус.* ⟨ *лат.*] *и.* Төрлө тоҡом хайуан йәки үҫемлектең тәбиғи йәки яһалма ҡушылыуынан килеп сыҡҡан яңы төр. *Арыш менән бойҙай гибриды. Бойҙай менән аҡтамыр гибриды.* ■ *Беҙ пиондар менән селекция эшен күптән башлағайныҡ, уның меңәрләгән гибридтарынан бер нисә яңы сорт сығарҙыҡ: «Өфө таңдары», «Башҡортостан гүзәле», «Агиҙел», «Урал ынйыһы» һ. б.* «Совет Башҡортостаны», 1986, 16 ғинуар.

**ГИБРИДЛАШТЫРЫУ** *ҡ.* Яңы сифатлы яҡшы тоҡом алыу өсөн хайуан һәм үҫемлектәрҙең төрлө тоҡомон, төрөн ҡушыу.

**ГИБРИДЛАШЫУ** *ҡ.* Гибридҡа әйләнеү, гибрид булыу.

**ГИГАНТ** [*рус.* гигантский] *с.* **1.** Бик ҙур. *Баҡсала[ғы] гигант һәйкәл аҫтында Башҡортостандың халыҡ геройы Шайморатовтың кәүҙәһе ята.* Ә. Ихсанов.

**2.** Күләме, әһәмиәте яғынан ҙур. *Гигант төҙөлөш.* // *Соколов-Сарбай тау байыҡтырыу комбинатының горняктары тау-руда гигантын төҙөүҙе тамамлап килә.* «Совет Башҡортостаны», 1965, 6 ғинуар.

◆ **Гигант аҙымдар менән** ҙур тиҙлек менән (хеҙмәттәге, үҫештәге). *Авиация гигант аҙымдар менән үҫә.*

**ГИГИЕНА** [*рус.* ⟨ *гр.*] *и.* **1.** Тышҡы шарттарҙың кеше һаулығына яһаған тәьҫирен һәм һаулыҡ һаҡлау сараларын өйрәнә торған фән.

**2.** Һаулыҡ һаҡлау саралары. *Уҡыусылар гигиенаһы. Шәхси гигиена. Эш гигиенаһы.* ■ *Дөйөм гигиена һәм күҙ гигиенаһы ҡағиҙәләрен, көндәлек режимды һаҡлаған, физкультура, спорт менән даими шөғөлләнгән уҡыусыларҙа күрәшлек һирәк була.* «Совет Башҡортостаны», 1986, 30 ғинуар.

**ГИГИЕНИК** *с.* Гигиенаға мөнәсәбәтле. *Культуралы кеше гигиеник яҡтан да культураға эйә булырға тейеш.* „Совет Башҡортостаны", 1966, 2 ноябрь.

**ГИГИЕНИСТ** [*рус.*] *и.* Гигиена менән шөғөлләнгән врач.

**ГИД** [*рус.* ⟨ *фр.*] *и.* Сәйәхәтселәргә, туристарға күрһәтеп, һөйләп йөрөгән кеше.

**ГИДАЙ** [*фарс.*] *с.* Бер нәмәһеҙ, ярлы. *Гидай булыу.* ■ — *Әй хоҙай ағай! Әсәмде алдың, атамды алдың, баламды алдың, малымды ҡырып, мине гидай ҡалдырып, тағы ла ҡаңғырттың.* И. Көҫәпҡол. // *Ярлы, батрак, гидай — минең даным, уларһыҙ шат үткән көнөм юҡ.* Б. Ишемғол.

**ГИДАЙЛАНЫУ** *ҡ.* Ярлыға ҡалыу; бөлөү.

**ГИДРА** [*рус.* ⟨ *гр.*] *и.* **1.** Боронғо грек мифологияһындағы ҡырҡҡан бер баш урынына яңынан икәү үҫеп тора торған күп башлы йылан.

**2.** Ауыҙ тирәһе һәрмәүестәр менән уратылған умыртҡаһыҙ ваҡ сөсө һыу йәнлеге.

**ГИДРАВЛИК** *с.* Шыйыҡлыҡ көсө менән эшләгән. *Гидравлик двигатель.* ■ *Ҡатламдарҙы гидравлик ысул менән ярҙырһаң, скважиналар 6-7 ай буйы юғары дебит менән эшләй.* «Совет Башҡортостаны», 1965, 19 март.

**ГИДРАВЛИКА** [*рус.* ⟨ *гр.*] *и.* Шыйыҡлыҡтың торош һәм хәрәкәт закондарын һәм шуны тормошта файҙаланыу ысулдарын өйрәнә торған фән.

**ГИДРАНТ** [*рус.* ⟨ *гр.*] *и.* Урамдарға һыу һибеү, янғын һүндереү өсөн ҡуйылған һыу колонкаһы йәки краны. *Автомобилдәрҙе гидранттарға тоташтырырға! — тигән команда яңғыраны.* «Совет Башҡортостаны», 1975, 13 октябрь.

**ГИДРАТ** [*рус.* ⟨ *гр.*] *и.* Химик матдәнең һыу менән ҡушылдығы. *Кальций окисы гидраты.*

**ГИДРАТЛАНЫУ** *ҡ.* *төш. ҡар.* **гидратлау.**

**ГИДРАТЛАУ** *ҡ.* Химик матдәне һыу менән ҡушылдырыу. *Мазутты пар ярҙамында гидратлап, тонок нефть продукттары эшләп сығаралар.* «Совет Башҡортостаны», 1966, 9 август.

**ГИДРИД** [*рус.* ⟨ *гр.*] *и.* Водород менән башҡа элементтарҙың химик ҡушылмаһы.

**ГИДРОАЭРОДРОМ** [*рус.*] Гидросамолёттар ултыра торған аэродром; һыу аэродромы.

**ГИДРОБИОЛОГИЯ** [*рус.* ⟨ *гр.*] *и.* Һыуҙа йәшәүсе организмдарҙың тормошон өйрәнә торған фән.

**ГИДРОГЕОЛОГ** [*рус.*] *и.* Гидрогеология буйынса белгес.

**ГИДРОГЕОЛОГИК** *с.* Гидрогеологияға мөнәсәбәтле. *Гидрогеологик разведка. Гидрогеологик шарттар.*

**ГИДРОГЕОЛОГИЯ** [*рус.* ⟨ *гр.*] *и.* Ер аҫты һыуҙарының килеп сығышы һ. б. яҡтарын өйрәнә торған фән.

**ГИДРОГРАФ** [*рус.*] *и.* Гидрография буйынса белгес.

**ГИДРОГРАФИЯ** [*рус.*] *и.* Гидрологияның ер өҫтө һыуҙарын өйрәнә торған бүлеге.

**ГИДРОДИНАМИКА** [*рус.*] *и.* Гидромеханиканың ҡыҫылмай торған шыйыҡлыҡтарҙы һәм уларҙың ҡаты матдәләр менән үҙ-ара йоғонтоһон өйрәнә торған бүлеге.

**ГИДРОЛИЗ** [*рус.* ⟨ *гр.*] *и.* *хим.* Ҡатмарлы матдәнең һыу тәьҫире менән тарҡалышы. *Гидролиз реакцияһы.* ■ *Өфөлә гидролиз заводы төҙөләсәк. Ул ағас ҡалдыҡтарынан малға ашата торған сүпрә, .. пластмасса һәм фурфурал тигән матдә эшләп сығарасаҡ.* М. Хисмәтов.

**ГИДРОЛИЗЛАНЫУ** *к. төш. кар.* **гидролизлау.**

**ГИДРОЛИЗЛАУ** *к.* Һыу тәьҫире менән ҡатмарлы матдәне тарҡатыу. *Пар, тоҙ кислотаһы һаламды гидролизлай.*

**ГИДРОЛОГ** [*рус.*] *и.* Гидрология буйынса белгес.

**ГИДРОЛОГИК** *с.* Гидрологияғы мөнәсәбәтле. *Гидрологик режим. Гидрологик шарттар.*

**ГИДРОЛОГИЯ** [*рус.* 〈 *гр.*] *и.* Ер йөҙөндәге һыу ятҡылыҡтарын һәм тәбиғәттәге һыу әйләнешен өйрәнә торған фән.

**ГИДРОМЕТЕОРОЛОГИК** *с.* Гидрометеорологияға мөнәсәбәтле. *Гидрометеорологик күҙәтеүҙәр.*

**ГИДРОМЕТЕОРОЛОГИЯ** [*рус.*] *и.* Атмосфералағы һыу әйләнешен өйрәнә торған фән. *Гидрометеорология институты. СССР үҙәк гидрометеорология станцияһы.*

**ГИДРОМЕХАНИКА** [*рус.*] *и.* Механиканың шыйыҡлыҡтарҙың торош һәм хәрәкәтен, шыйыҡлыҡтар менән ҡаты матдәләрҙең үҙ-ара йоғонтоһон өйрәнә торған бүлеге. *Гидромеханика приборҙары.*

**ГИДРОНАВТ** [*рус.* 〈 *гр.*] *и.* Һыу аҫтында йөрөп, тикшеренеүҙәр алып барған кеше.

**ГИДРОПЛАН** [*рус.*] *и. кар.* **гидросамолёт.**

**ГИДРОПОН** *с. кар.* **гидропоник.** *Гидропон ысул. Гидропон ысул менән йәшелсә үҫтереү.*

**ГИДРОПОНИК** *с.* Гидропоникаға мөнәсәбәтле. *Гидропоник метод.* ■ *Баҫыуҙар өсөн яһалма һөт эшләнде, ә ҡоштарға гидропоник ысул менән йәшел аҙыҡ үҫтерелде.* «Совет Башҡортостаны», 1966, 24 март.

**ГИДРОПОНИКА** [*рус.* 〈 *гр.*] *и.* Үҫемлекте туҡлыҡлы иретмәлә тупраҡһыҙ үҫтереү ысулы.

**ГИДРОСАМОЛЁТ** [*рус.*] *и.* Һыуға төшә һәм һыуҙан осоп китеүгә ҡулайлаштырылған самолёт.

**ГИДРОСТАНЦИЯ** [*рус.*] *и. кар.* **гидроэлектростанция.**

**ГИДРОСФЕРА** [*рус.*] *и.* Ер өҫтөндәге һыу ҡатламы, ер өҫтөндәге һыуҙар (океан, диңгеҙ, йылға, күлдәр).

**ГИДРОТЕХНИК** [*рус.*] *и.* Гидротехника буйынса.

**ГИДРОТЕХНИК** *с.* Гидротехникаға мөнәсәбәтле. *Гидротехник объект. Гидротехник эш.*

**ГИДРОТЕХНИКА** [*рус.*] *и.* Тәбиғәттәге һыу байлығын, уны төрлө ҡоролмалар ярҙамында хужалыҡта ҡулланыу, һыу баҫыуҙан һаҡлаиыу юлдарын өйрәнә торған фән һәм техника тармағы. *Гидротехника институты.*

**ГИДРОТУРБИНА** [*рус.*] *и.* Хәрәкәтләнеп торған һыу энергияһын вал, яҫмалар әйләндерә торған энергияға әйләндереүсе двигатель.

**ГИДРОУЗЕЛ** [*рус.*] *и.* Гидротехник ҡоролмалар йыйымы (станция, канал, шлюз һ. б.). *[Был гидроузел] .. гидроэлектростанциянан, бейек быуанан, .. шлюздан һәм башҡа ҡоролмаларҙан торасаҡ.* Ғ. Әмири.

**ГИДРОФОН** [*рус.* 〈 *гр.*] *и.* Һыу аҫтында барлыҡҡа килгән йәки тарала торған тауыш тулҡындарын тота торған прибор.

**ГИДРОХИМИЯ** [*рус.*] *и.* Ер өҫтө һыуҙарының химик составы һәм уны өйрәнеү юлдары тураһындағы фән.

**ГИДРОЭЛЕКТРИК** *с.* Һыу көсө менән электроэнергия етештергән. *Гидроэлектрик станция.*

**ГИДРОЭЛЕКТРОСТАНЦИЯ** [*рус.*] *и.* Һыу көсө ярҙамында барлыҡҡа килгән энергияны электр энергияһына әүерелдерә торған электростанция; һыу электр станцияһы. *Һаҡмар, Нөгөш, Эйек, Еҙем, Әҫем, Дим, Танып йылғаларында гидроэлектростанциялар төҙөргә була.* М. Хисмәтов.

**ГИДРОЭНЕРГЕТИК** *с.* Һыу энергияһы менән эшләгән. *Гидроэнергетик комплекс.*

**ГИДРОЭНЕРГЕТИКА** [*рус.*] *и.* Энергетиканың һыу энергияһы ресурстарын файҙаланыуға бәйле тармағы. *Тулы һыулы йылғалар .. гидроэнергетика ресурсы булыу йәһәтенән дә әһәмиәтле.* «Совет Башҡортостаны», 1985, 21 сентябрь.

**ГИҘҘЕРЕҮ** *к.* Төрлө ерҙе күрһәтеп йөрөтөү. *Донъя гиҙҙереү.*

**ГИҘЕНЕҮ** *к. кайт. кар.* **гиҙеү.** *Кукте ташлап мәләктәр был ерҙәрҙә гиҙенер.* Ш. Бабич.

**ГИҘЕҮ** *к.* Айҡап, күреп-белеп ҡыҙырып йөрөү; сәйәхәт итеү. *Донъя гиҙеү. Ил гиҙеү. Сахра гиҙеү.* ■ *Аҡмулла .. донъя гиҙергә ашҡына һәм ҡаҙаҡ далаларына сығып китә.* К. Мәргән. *Донъя гиҙҙем Рәсәй буйлап та — Балтигын да күрҙем, Байкалын. Украина .. Кавказ, күбеһен уттар аша үтеп, байҡаным.* Н. Нәжми. *[Нәркәс һәүбәнгә:] Илем гиҙеп йөрөрһөң, бар һарайҙы күрерһең ..* «Аҡбуҙат».

● *Атка менгән ил гиҙәр, якшы кеше ил биҙәр.* Мәҡәл.

**ГИҘЕҮСЕ** *и.* Гиҙеп йөрөүсе, сәйәхәт итеүсе. *Донъя гиҙеүсе. Ил гиҙеүсе. Йыһан гиҙеүсе.* ■ *Дөм ҡараңғы тын ауылға инде ил гиҙеүсе сәсән.* М. Кәрим.

**ГИЗ** [*төр.*] *и. иҫк. кит. кар.* **тапҡыр** [3].

◆ **Бер гиз** бер ваҡыт. **Һәр гиз** һәр ваҡыт. *Аҡкан уктарыбыҙ һәр гиз кейеккә туктамай.* «Батыршаның хаты».

**ГИЗЛЕ** *с.* Серле, йәшерен. *Һүҙҙең гизле мәғәнәһе лә була.* Ғ. Хөсәйенов.

**ГИЗЛӘНЕҮ** *к. төш. кар.* **гизләү.** *Башҡорт халыҡ шағиры .. шәреҡ классиктарының тәрән философик мәғәнә, хикмәт һәм кинәйәләр менән гизләнгән поэтик традицияларына туранан-тура мөрәжәғәт итә.* Ғ. Хөсәйенов.

**ГИЗЛӘҮ** *к.* Йәшереү.

**ГИЛКЕ** *кар.* **килке.** *Бер гилке.* ■ *Фронттарҙа коммун Камай менән бергә көрәшеп йөрөнөк бер гилке.* Ғ. Амантай.

**ГИЛЬДИЯ** [*рус.* 〈 *нем.*] *и.* **1.** Урта быуаттарҙа Көнбайыш Европала сауҙагәрҙәр һәм ремесленниктар берләшмәһе.

**2.** Революцияға тиклемге Рәсәйлә сауҙагәрҙәрҙе байлығына ҡарап бүлә торған дәрәжә. *Беренсе гильдия сауҙагәре. Өсөнсө гильдия сауҙагәре.*

**ГИЛЬЗА** [*рус.* 〈 *нем.*] *и.* **1.** Атыу ҡоралдарында (туп, мылтыҡ һ. б.) ябыҡ яғына дары яһағы һалынған, икенсе асыҡ яғы пуля йәки снаряд ҡуйыу өсөн ҡулайлаштырылған көпсәк; патрон

төбө. *Мылтыҡ гильзаһы. Снаряд гильзаһы. Гильза ауыҙы.* ■ *[Зыков] наган барабанындағы буш гильзаларҙы алып ташлап, патрондар тултырҙы.* С. Ханов.

**2.** *тех.* Көшпә рәүешендәге төрлө деталь. *Ватылыуҙар ҙур ине. Тракторға яңы гильза һәм поршин ҡуйырға кәрәк.* Ғ. Идрис.

**ГИЛЬОТИ́НА** [*рус.* ⟨ *фр.*] *и.* Үлем язаһын атҡарыу (баш киҫеү) ҡоралы.

**ГИЛЯ́К** [*рус.*] *и.* Нивх халҡының элекке исеме.

**ГИМН** [*рус.* ⟨ *гр.*] *и.* **1.** Дәүләт йәки социаль берҙәмлек символы итеп ҡабул ителгән тантаналы йыр. *Советтар Союзының Дәүләт гимны. Интернационал — халыҡ-ара пролетариат гимны.*

**2.** Дан йыры; маҡтау. *Тормош гимны. Хеҙмәт гимны. Гимн булып яңғырау.* ■ *Айвазовскийҙың «Туғыҙынсы вал» картинаһы — ысын мәғәнәһендә кеше батырлығына гимн ул.* И. Кинйәбулатов.

**ГИМНАЗИ́СТ** [*рус.*] *и.* Гимназия уҡыусыһы.

**ГИМНА́ЗИЯ** [*рус.* ⟨ *гр.*] Революцияға тиклемге Россияла һәм ҡайһы бер сит илдәрҙәге урта мәктәп. *Ҡыҙҙар гимназияһы.* ■ *1823 йылда Өфөлә беренсе башлап гимназия асыла. Был гимназия .. дини мәктәптәргә ҡарағанда прогрессив уҡыу йорто [була].* З. Шәрҡи.

**ГИМНА́СТ** [*рус.*] *и.* Гимнастика менән шөғөлләнгән кеше, гимнастика оҫтаһы. *Гимнастар ярышы.*

**ГИМНАСТЁРКА** [*рус.*] *и.* Ҡалын туҡымаиан ултыртма яғалы итеп тегелгән (хәрби форма итеп ҡабул ителгән) ирҙәр күлдәге. *Йәшел гимнастёрка. Гимнастёрка кейеү.* ■ *Салбар, гимнастёркаларҙы рәтләп, ҡайыштарҙы тығыҙлап быуҙыҡ.* Д. Юлтый.

**ГИМНА́СТИКА** [*рус.* ⟨ *гр.*] *и.* Тәнде сыныҡтырыу өсөн эшләнә торған физик күнекмәләр йыйылмаһы. *Иртәнге гимнастика. Художестволы гимнастика. Дауалау гимнастикаһы. Производство гимнастикаһы. Гимнастика секцияһы. Гимнастика яһау.* ■ *Ғәләү ағай йоҡонан уянып сәғәткә күҙ һала, унан һикереп тороп, гимнастика яһай башлай.* С. Кулибай.

**ГИНЕКО́ЛОГ** [*рус.*] *и.* Ҡатын-ҡыҙ ауырыуҙары буйынса врач, гинекология белгесе. *Гинекологҡа күренеү.*

**ГИНЕКОЛОГИК** *с.* Гинекологияға мөнәсәбәтле. *Гинекологик операция.*

**ГИНЕКОЛО́ГИЯ** [*рус.* ⟨ *гр.*] *и.* Ҡатын-ҡыҙ организмының үҙсәнлектәрен, енес органдары ауырыуҙарын һәм уларҙы дауалау ысулдарын өйрәнә торған фән.

**ГИПЕ́РБОЛА** [*рус.* ⟨ *гр.*] *и.* Әҙәби әҫәрҙең тәьҫир көсөн арттырыу маҡсатында ниҙәндер бер сифатын сиктән тыш арттырып күрһәтеү алымы. *Гиперболаны автор әҙәби әҫәрҙең тәьҫир көсөн үҫтереү өсөн ҡуллана.* К. Әхмәтйәнов.

**ГИПЕРБОЛОИК** *с.* Гипербола менән бирелгән. *Гиперболоик образ.*

**ГИПЕРЕМИ́Я** [*рус.* ⟨ *гр.*] *и. мед.* Тәндең берәр өлөшөнә йәки берәр ағзаһына ҡан тулышыуы.

**ГИПЕРТО́НИК** [*рус.*] *и. һөйл.* Гипертония менән ауырыған кеше.

**ГИПЕРТОНИ́К** *с.* Гипертонияға мөнәсәбәтле. *Гипертоник ауырыу.*

**ГИПЕРТОНИ́Я** [*рус.* ⟨ *гр.*] *и.* **1.** *мед.* Ҡан баҫымының күтәрелеүе.

**2.** *һөйл.* Ҡан баҫымы күтәрелеүгә бәйләнешле ауырыу.

**ГИПЕРТРОФИ́Я** [*рус.* ⟨ *гр.*] *и.* Ауырыу йәки ауыр эш эшләү сәбәпле тәндең берәр урыны йәки ағзаһы ҙурайып үҫеп китә торған ауырыу. *Йөрәк гипертрофияһы. Мускул гипертрофияһы.*

**ГИПНО́З** [*рус.* ⟨ *гр.*] *и.* **1.** Икенсе кеше ихтыяры тәьҫирендә барлыҡҡа килтерелгән (кеше һәм юғары умыртҡалы хайуандарҙа була торған) йоҡомһораған йәки йоҡлаған һымаҡ хәл. *Гипноз хәлендә булыу.*

**2.** Кешенең ихтыярына тәьҫир итеп (дауалау маҡсатында) йоҡлатыу. *Гипноз сеансы. Гипноз менән дауалау.*

**ГИПНОЗЛАНЫУ** *ҡ. төш. ҡар.* **гипнозлау.**

**ГИПНОЗЛАУ** *ҡ.* Гипноз хәленә килтереү; арбау. *Йәнлек, кейек, ҡош-ҡорттарҙы хәрәкәтле, көйлө әйтемдәр менән гипнозлауҙы арбау .. тип әйтәләр түгелме?* Ғ. Амантай.

**ГИПНОЗСЫ** *и.* Гипноз менән шөғөлләнеүсе; арбаусы. / Гипноз менән дауалаусы врач.

**ГИПНОТИЗЁР** [*рус.*] *и. ҡар.* **гипнозсы.** *Емеш .. гипнотизёр булыр өсөн кескәй сактан уҡ үҙендә ҡаты ихтыяр, көслө холоҡ тәрбиәләргә кәрәклеген белде.* З. Биишева.

**ГИПОКСИ́Я** [*рус.* ⟨ *гр.* + *лат.*] *и.* Тән туҡымаларында кислород аҙайыуы; кислород етешмәү.

**ГИПО́ТЕЗА** [*рус.* ⟨ *гр.*] *и.* Берәр хәл, күренештең сығышы, асылы хаҡындағы фәнгә нигеҙләнеп алдан әйтелгән, ләкин дөрөҫлөгө тәжрибә нигеҙендә әлегә иҫбатланмаған фекер; ғилми фараз. *Гипотеза ҡороу.* ■ *Нефттең барлыҡҡа килеүе [тураһында] төрлө ғалимдың төрлө гипотезаһы бар.* Д. Бураҡаев.

**ГИПОТЕНУ́ЗА** [*рус.* ⟨ *гр.*] *и. мат.* Тура мөйөшлө өсмөйөштөң тура мөйөшкә ҡаршы ятҡан яғы.

**ГИПОТЕРМИ́Я** [*рус.* ⟨ *гр.*] *и. мед.* Кеше йәки хайуандарҙың тәненең температураһын төшөрөү. / Организмды йәки уның берәр өлөшөн дауалау маҡсатында яһалма рәүештә һыуытыу. *[Моталов:] Мин уға [ҡыҙға] яңы ысул менән операция яһаясаҡмын. Тундырып — гипотермия.* И. Абдуллин.

**ГИПОТО́НИК** [*рус.*] *и. һөйл.* Гипотония менән ауырыған кеше.

**ГИПОТОНИ́Я** [*рус.* ⟨ *гр.*] *и. мед.* Ҡан баҫымының ғәҙәттәгенән түбәнәйеүе.

**ГИПО́ФИЗ** [*рус.* ⟨ *гр.*] *и. анат.* Баш мейеһенең төбөндә урынлашҡан, организмдың үҫешенә тәьҫир итә торған эске секреция биҙе.

**ГИППОПОТА́М** [*рус.* ⟨ *гр.*] *и. ҡар.* **бегемот.**

**ГИПС** [*рус.* ⟨ *гр.*] *и.* **1.** Аҡ йәки һарғылт төҫтәге ээбизле минерал. *Көнбайыш Башҡортостан ангидрит менән гипсҡа бай. Улар еңел эшкәртелә, декоратив сифатҡа эйә.* «Совет Башҡортостаны», 1965, 6 февраль.

**2.** Шул минералдан яһалған скульптура.

**3.** Һынған, сыҡҡан һөйәккә шул минерал менән ҡатырып бәйләгән ҡоршау. *Гипс һалыу. Гипста ятыу. Гипсты алыу.*

**ГИПСЛАНЫУ** *ҡ. төш. ҡар.* **гипслау.**

**ГИПСЛАТЫУ** *ҡ. йөкм. ҡар.* **гипслау.**

**ГИПСЛАУ** *ҡ.* **1.** *мед.* Гипс һалып ҡатырыу. *Һынған һөйәкте гипслау.*

**2.** *а. х.* Татырлы ерҙе гипс менән ашлау. *Татырлауыҡты гипслау.*

**ГИРЛЯ́НДА** [*рус.* 〈 *ит.*] *и.* Сылбыр һымаҡ итеп үрелгән сәскәләр, йәшел үҫемлектәр бәйләме. / Нимәнеңдер шуға оҡшатып яһалған теҙеме. *Шыршыны электрик лампочкалар гирляндаһы менән биҙәү.*

**ГИСТО́ЛОГ** [*рус.*] *и.* Гистология буйынса белгес.

**ГИСТОЛО́ГИЯ** [*рус.* 〈 *гр.*] *и.* Кеше һәм хайуан организмы туҡымаларының төҙөлөшөн өйрәнгән фән.

**ГИТ** [*рус.* 〈 *ингл.*] *и.* **1.** Аттарҙың ҡыҫҡа араға сабышы. *Ике гиттан торған икенсе һәм бишенсе заезда ла «Астра» ҡушаматлы юртаҡ беренселекте алды.* «Совет Башҡортостаны», 1966, 19 июль.

**2.** Еңел атлетика, мотоцикл йәки велосипед спортында билдәле бер араны яңғыҙ уҙышыуҙан торған ярыш.

**ГИТА́РА** [*рус.* 〈 *исп.*] *и.* Оҙон грифлы, һигеҙгә оҡшаған корпуслы сиртеп уйнай торған ҡыллы музыка ҡоралы. *Ете ҡыллы гитара. Гитара тауышы. Гитара уйнау.* ■ *Вагондың икенсе башында гитара сиртеп бер төркөм йәштәр йыр һуҙҙы.* Ш. Янбаев.

**ГИТАРАСЫ** *и.* Гитарала уйнаусы.

**ГИТЛЕРИ́ЗМ** [*рус.*] *и.* Германияла 1933—1945 йылдарҙа булған Гитлер етәкселегендәге фашистик диктатура һәм уның идеалогияһы. *Һаҡмар буйы ҡамышлыҡ, гитлеризмды юҡ иткәс, айырылышмаҫҡа ҡауыштыҡ.* Н. Иҙелбай.

**ГИТЛЕРСЫ** *и.* Немец фашистары армияһы һалдаты йәки офицеры. *Гитлерсылар беҙҙең позицияларга туктауһыҙ йәҙрәләр һәм миналар яуҙыралар.* З. Рафиков.

**ГИТӘМ** [*гәр.*] *и. иҫк.* Туҡыма. *Киндер сәстем яр, яр. Киндер гитәм булганса, килһен бутам яр, яр* (Сеңләүҙән).

**ГЛАВА́** [*рус.*] *и. ҡар.* **бүлек** 2.

**ГЛАДИА́ТОР** [*рус.* 〈 *лат.*] *и.* Боронғо Римда: цирк аренаһында көрәшеү йәки йыртҡыс януар менән алышыу өсөн ҡол һәм әсирҙәрҙән әҙерләнгән көрәшсе.

**ГЛАДИО́ЛУС** [*рус.* 〈 *лат.*] *и.* Ҡыяҡ япраҡлы, төрлө төҫтәге эре сәскәле күп йыллыҡ декоратив үҫемлек. *Гладиолус сәскәһе. Гладиолус үҫтереү.*

**ГЛАЗУРЛАНЫУ** *ҡ. төш. ҡар.* **глазурлау.** *Глазурланған һауыт.*

**ГЛАЗУРЛАТЫУ** *ҡ. йөкм. ҡар.* **глазурлау.**

**ГЛАЗУРЛАУ** *ҡ.* Глазурь менән ҡаплау, өҫтөнә глазурь йүгертеү.

**ГЛАЗУ́РЬ** [*рус.* 〈 *нем.*] *и.* **1.** Балсыҡ, фаянс һауыт-һабаның өҫтөнә ялата торған махсус ялтырауыҡ иретмә. *Унан уның [сынаяҡтың] бөтәһен глазурга маналар, глазурга мангандан һуң улар йылтырап ҡала.* Ғ. Амантай.

**2.** Икмәк өҫтөнә һөртә торған шәкәр иретмәһе.

**ГЛА́СНЫЙ** [*рус.*] *и. тар.* Революцияға тиклемге Россияла урындағы идаралыҡҡа һайланған кеше. *Өйәҙ земствоһы гласныйҙары.* ■ *Земство йыйылыштарында гласныйҙар күберәк үҙҙәренә жалованье арттырыуҙы һорап сығыш яһайҙар.* М. Өмөтбаев.

**ГЛАУКО́МА** [*рус.* 〈 *гр.*] *и. мед.* Күҙ алмаһы эсендәге баҫым артыу сәбәпле барлыҡҡа килгән күҙ ауырыуы; ҡараһыу .. *Глаукома менән ауырыу. Глаукоманан һуҡырайып ҡалыу.*

**ГЛИКОГЕ́Н** [*рус.* 〈 *гр.*] *и.* Ҡандағы шәкәрҙән бауыр һәм мускулдарҙа барлыҡҡа килгән кеше һәм хайуандарҙағы төп һаҡлыҡ углевод; хайуан крахмалы.

**ГЛИ́ССЕР** [*рус.* 〈 *фр.*] *и.* Яҫы төплө тиҙ йөрөшлө кәмә.

**ГЛИСТ** [*рус.*] *и.* Кеше һәм хайуандарҙың эске органдарында йәшәй торған паразит ҡорт. *Таҫма глист. Глист йоморткалары.*

**ГЛИЦЕРИ́Н** [*рус.* 〈 *нем.*] *и.* Майҙы һелтеләү юлы менән алына торған ҡуйы, төҫһөҙ, татлы шыйыҡса (медицинала, техникала ҡулланыла).

**ГЛИЦЕРИНЛЫ** *с.* Глицерин ҡушылған. *Глицеринлы һабын.*

**ГЛОБАЛЬ** [*рус.* глобальный] *с. кит.* Бөтә ер шарын, бөтә донъяны эсенә алған. *Глобаль радиоэлемтә. Глобаль рәүештә тикшереү.*

◆ **Глобаль ракета** һуғыш зарядын ер шарының теләһә ҡайһы нөктәһенә еткерә ала торған ракета.

**ГЛО́БУС** [*рус.* 〈 *лат.*] *и.* Ер шарының йәки башҡа күк есеменең үҙ күсәре тирәһендә әйләнмәле итеп вертикаль таяуға ултыртып эшләнгән бәләкәй моделе. *Ер шары глобусы. Айҙың тәүге глобусы эшләнде.*

**ГЛО́ССА** [*рус.* 〈 *гр.*] *и. лингв., әҙ.* Иҫке ҡулъяҙмаларҙың ситендә йәки эсендә аңлашылмаған һүҙҙәр бирелгән аңлатма.

**ГЛОССА́РИЙ** [*рус.* 〈 *лат.*] *и. лингв., әҙ.* Иҫке йәки башҡа төрлө яҙмалағы аңлашылмаған йәки иҫкергән һүҙҙәрҙе аңлатып, ҡушымта итеп биргән аңлатмалар йыйынтығы; һүҙлек.

**ГЛЮКО́ЗА** [*рус.* 〈 *гр.*] *и.* Үҫемлек емештәрендә һәм тереклек организмында була торған йөҙөм шәкәре.

**ГНОСЕОЛОГИК** *с.* Гносеологияға ҡараған, гносеологияға мөнәсәбәтле. *Гносеологик ҡараш.*

**ГНОСЕОЛО́ГИЯ** [*рус.* 〈 *гр.*] *и. филос.* Донъяны танып белеү мөмкинлеге һәм шул танып белеүҙең дөрөҫлөгө, ысынлығы тураһындағы философик тәғлимәт; танып белеү теорияһы.

**ГОБЕЛЕ́Н** [*рус.* 〈 *фр.*] *и.* Стенаға элеү өсөн төрлө һүрәт төшөрөп ҡулдан һуҡҡан йоҡа келәм. *Тәбиғәт күренеше эшләнгән гобелен.* / Һүрәт төшөрөп һуҡҡан беше декоратив туҡыма.

**ГОБО́Й** [*рус.* 〈 *нем.*] *и.* Ағастан яһалған тынлы музыка ҡоралы (тауыш юғарылығы яғынан флейта менән кларнет араһында тора). *Гобойҙа уйнау.*

**ГОЛ** [*рус.* 〈 *ингл.*] *и. спорт.* Футбол, хоккей һ. б. уйындарҙа ҡапҡаға туп индереп алған мәрәй. *«Салауат Юлаев» командаһы ун дүрт уйында утыҙ өс гол индерҙе.* «Совет Башҡортостаны», 1985, 14 декабрь.

**ГОЛЛАНД** *и.* Нидерландтың (Голландияның) төп халҡын тәшкил иткән милләт һәм шул милләттең бер кешеһе. *Голланд халҡы. Голланд ҡатыны.*

**ГОЛЬФ** [*рус.* ⟨*ингл.*] *и.* Төрлө соҡор, тоткарлыҡ аша сәкән менән туп һуғып уйнай торған уйын (күберәк АҠШ һәм Англияла таралған).

♦ **Гольф ойоҡ** ҡунысы тубыҡҡа ҡәҙәр етеп торған ойоҡ. *Гольф ойоҡ бәйләү.* **Гольф салбар** балағы тубыҡтан түбән эленә торған ҡыҫҡа салбар.

**ГОМАН** *и. ҡар.* **гөман.**

**ГОНАҺ** *и. ҡар.* **гөнаһ.**

**ГОНГ** [*рус.* ⟨*ингл.*] *и.* Сите ҡайтарылып бөгөлгән еҙ тәрилкә рәүешендәге, ағас туҡмаҡ менән һуғып уйнай торған музыка ҡоралы (сигнал биреү өсөн дә ҡулланыла). *Гонг тауышы. Гонг һуғыу.* ■ *Гонг яңғыраны. Боксёрҙар тағы ла бер-береһенә яҡынлаштылар.* Р. Ғабдрахманов.

**ГОНДО́ЛА** [*рус.* ⟨*ит.*] *и.* **1.** Яҫы төплө, мороно менән ҡойроғо бейек итеп матурлап эшләнгән, көймәле бер ишкәкле венециан кәмәһе.

**2.** Һауа шарының кеше ултыра торған кәрзине һәм дирижабль йәки аэростаттың кеше, төрлө ҡорамал урынлашҡан ере.

**3.** *т. юл* Төбө асылмалы, йөктө үҙе бушата торған түбәһеҙ тимер юл вагоны.

**ГОНДОЛЬЕ́Р** [*рус.* ⟨*ит.*] *и.* Гондола (1 мәғ.) ишкәксеһе.

**ГОНОКО́КК** [*рус.* ⟨*гр.*] *и. мед.* Гонорея микробы.

**ГОНОРА́Р** [*рус.* ⟨*лат.*] *и.* Договор, килешеү буйынса художник, яҙыусы, адвокат һәм башҡа эшмәкәрҙәрҙең эшенә түләнә торған аҡсалата эш хаҡы. *Автор гонорары. Гонарар алыу.* ■ *— Аҡса бар мәл, газетала сыҡҡан .. мәҡәләм өсөн гонорар алғайным.* Н. Мусин.

**ГОНОРАРЛЫ** *с.* Гонорар түләнә торған. *Гонорарлы эш.*

**ГОНОРЕ́Я** [*рус.* ⟨*гр.*] *и.* Гонококк микробынан барлыҡҡа килгән, бәүел юлын эренләтә торған венерик ауырыу. .. *Сифилис, гонорея һымаҡ венерик ауырыу менән ауырығанда, һауыҡмай тороп өйләнешеү тыйыла.* В. Ғүмәров.

**ГОПА́К** [*рус.*] *и.* Украин халыҡ бейеүе һәм шул бейеүҙең көйө. *Гопакка бейеү.*

**ГОРИЗО́НТ** [*рус.* ⟨*гр.*] *и.* **1.** *ҡар.* **офоҡ.** *Аҡһыл сәсле тауҙар .. горизонттан башлап тирә-яҡты балдаҡ кеүек алған уратып.* Г. Юнысова.

**2.** *гидрол.* Һыу ятҡылығындағы һыуҙың кимәле.

**3.** *тау* Ҡаҙылдыҡ байлыҡ ятҡылығын билдәле кимәлдә киҫеп үткән горизонталь яҫылыҡ. *Көнбайыш Башҡортостандың бөтә районларында ла девон һәм карбон ҡатламдарында нефтле яңы структуралар һәм быгаса тикшерелмәгән нефтле яңы горизонттар табыу өсөн мөмкинлектәр күп.* Д. Бураҡаев.

**4.** *күсм.* Фән, белем өлкәһендәге мөмкинлек. *Фән горизонттары.*

**ГОРИЗОНТА́ЛЬ** [1] [*рус.*] *и. геод.* Картала бер үк бейеклектә ятҡан нөктәләрҙе тоташтырған кәкре һыҙыҡ.

**ГОРИЗОНТАЛЬ** [2] [*рус.* горизонтальный] *с.* Горизонт яҫылығына параллель ятҡан. *Горизонталь һыҙыҡ.*

**ГОРИ́ЛЛА** [*рус.* ⟨*ингл.*] *и.* Экватор Африкаһындағы кешегә оҡшаш иң эре маймыл.

**ГОРМО́Н** [*рус.* ⟨*гр.*] *и. физиол.* Эске секреция биҙҙәренән ҡанға бүленеп, ағзаларҙың дөрөҫ эшләүен тәьмин итә торған матдә. *Ҡалҡан. биҙ гормондары. Үҫеү гормондары.*

**ГОРМОНАЛЬ** [*рус.* гормональный] *с.* Гормондан торған. *Гормональ матдә.*

**ГОРМОНЛЫ** *с.* Гормоны булған. *Гормонлы препарат.*

**ГОРМОНОТЕРАПИ́Я** [*рус.*] *и.* Гормонлы дарыу менән дауалау ысулы.

**ГОРН** [1] [*рус.*] *и.* **1.** Металл иретә, керамик нәмәләр яндыра торған мейес.

**2.** Домна мейесенең ут яна, ирегән металл йыйыла торған аҫҡы өлөшө.

**ГОРН** [2] [*рус.* ⟨*нем.*] *и. ҡар.* **борғо** [1]. *Юлай кинәт кенә яҡында барабан һәм горн тауышын ишетеп ҡалды.* Ә. Ихсан.

**ГОРНИ́СТ** [*рус.*] *и. ҡар.* **борғосо.** *Бына, һауа яңғыратып, горнист сигнал уйнап ебәрҙе.* З. Бишева.

**ГОРНИ́ЧНЫЙ** [*рус.* горничная] *и.* Бүлмәләрҙе йыйыштырып, ҡарап торған ҡатын-ҡыҙ. *Гостиница горничныйы.* ■ *Ул арала горничный Клава, селтәр ситле аҡ алъяпҡыс, аҡ башлыҡтары менән ялт итеп килеп етте.* Һ. Дәүләтшина.

**ГОРНОВО́Й** [*рус.*] *и.* Горн [1] янында эшләгән эшсе. *Цехтың алдынғы горновойҙары Әбүзәр Нуриев менән Ваһап Сәйетйәновтар өсөн дә домнасылар коллективы һынауҙар аша үтелгән үҫеш мәктәбе булды.* М. Хәйҙәров.

**ГОРНЯ́К** [*рус.*] *и.* **1.** Тау промышленносы эшсеһе.

**2.** Тау промышленносы инженеры йәки тау институты студенты.

**ГОРОДИ́ЩЕ** [*рус.*] *и.* Боронғо кешеләр торған нығытмалы урын; ҡаласыҡ.

**ГОРОДНИ́ЧИЙ** [*рус.*] *и.* Революцияға тиклемге Россияла 19 быуат яртыһына тиклем булған ҡала башлығы.

**ГОРОДОВО́Й** [*рус.*] *и.* Революцияға тиклемге Россияла ҡала полицияһындағы түбәнге дәрәжә, чин. *Урамда өс кеше һөйләшеп торһа, городовой йә килеп тота, йә тарата торған булған.* З. Шәрҡи.

**ГОРТЕ́НЗИЯ** [*рус.* ⟨*лат.*] *и.* Түңәрәк япраҡлы, эре сәскәле декоратив үҫемлек. *Ҡырағай гортензия.*

**ГОРЧИ́ЦА** [*рус.*] *и.* **1.** Әүернә сәскәлеләр ғаиләһенә ҡараған ваҡ һары сәскәле, ҡуҙаҡ орлоҡло үлән (орлоғонан ашамлыҡ майы, эфир майы алына). *Горчица орлоғо. Аҡ горчица. Ҡара горчица.* ■ *Республика сәсеүлектәрендә башҡа майлы культураларҙан май етене, горчица, рыжик осрай.* М. Хисмәтов.

**2.** Шул үҫемлектең онтаҡ итеп тартылған орлоғо һәм ошо онтаҡтан яһалған әсе аш тәмләткес. *Горчица шикелле әсе. Итте горчица менән ашау.*

**ГОРЧИ́ЧНИК** [*рус.*] *и.* Ҡан йөрөшөн көсәйтеү өсөн тәнгә ябып дауалауға тәғәйенләнгән,

горчица һөртөп әҙерләнгән ҡағыҙ йәки сепрәк киҫәге. *Горчичник һалыу.*

**ГО́СПИТАЛЬ** [*рус.* ⟨*нем.*] *и.* Дауалау учреждениеһы, больница (ғәҙәттә, хәрбиҙәр өсөн). *Ҡыр госпитале.* ■ *Шамил ағай дауам итә: „Яраланған килеш мине госпиталгә алып киткәндәр“.* К. Кинйәбулатова. *Госпиталь бар беҙҙең янда, унда боецтар ята.* Р. Ниғмәти.

**ГОСТИ́НИЦА** [*рус.*] *и.* Ситтән килгән кешеләр төшөп ҡуна торған йыһазлы йорт; ҡунаҡхана. *Гостиница номеры. Гостиницаға төшөү. Гостиницала тороу.* ■ *Бер нисә минут үтеүгә гостиница номерында мине күҙлек кейгән, тәбәнәк кәүҙәле бер ағай ҡаршылаңы.* Т. Сәғитов.

**ГОТИК** *с.* Готикаға мөнәсәбәтле. *Готик архитектура.* / Готика стилендә эшләнгән. *Готик сиркәү.*

♦ **Готик шрифт** хәрефтәрҙе мөйөшләп, осло итеп кәкерсәкләп яҙыу формаһы.

**ГО́ТИКА** [*рус.* ⟨*ит.*] *и.* Урта быуаттың һуңғы осоронда Европала бай декоратив биҙәкле, семәрле, осло еңел көмбәҙҙәре күккә ашҡан соборҙар төҙөүҙә киң таралыш алған архитектура стиле.

**ГОТОВА́ЛЬНЯ** [*рус.*] *и.* Ҡумтаға һалынған чертеж ҡорамалдары йыйылмаһы.

**ГОТТАР** [*рус.* готы] *и.* Көнсығыш герман ҡәбиләләре. *Готтар теле.*

**ГОТТЕНТО́Т** [*рус.*] *и.* Көньяҡ Африка республикаһында, Намибияның үҙәк һәм көньяҡ райондарында йәшәгән халыҡ һәм шул халыҡтың бер кешеһе. *Готтентот телдәре.*

**ГОФРИРО́ВКА** [*рус.* ⟨*фр.*] *и.* Бере өҫтөнә бере буй-буй бөкләп һалынған ҡырлы һырҙар теҙеме.

**ГОФРИРОВКАЛАТЫУ** *ҡ. йөкм. ҡар.* **гофрировкалау.**

**ГОФРИРОВКАЛАУ** *ҡ.* Гофрировкалы итеү. *Күлдәктең итәген гофрировкалау. Гофрировкалап тегеү.*

**ГОФРИРОВКАЛЫ** *с.* Тулҡын-тулҡын булып бөкләп һырланған. *Гофрировкалы итәк. Гофрировкалы тимер. Гофрировкалы ҡағыҙ.*

**ГӨБӨ** *и. диал.* Көбө.

**ГӨБӨР** *и. диал.* Гөбөргәйел.

**ГӨБӨР-ГӨБӨР** *оҡш.* Һауын һауғанда йәки көбөлә ҡымыҙ бешкәндә сыҡҡан тауышты белдергән һүҙ. *Мал-тыуар ҙа бөгөн көндәгенән иртәрәк ҡуҙғатылды, гөбөр-гөбөр һөт һауған тауыштар ҙа иртә яңғыраны.* Й. Солтанов.

**ГӨБӨРГӘЙЕЛ** *и.* Ҡалын ҡабырсаҡ көплө (аяҡтарын, башын шунда йыя алған) һөйрәлеүселәр ғаиләһенә ҡараған бик яй хәрәкәтле ерһыу йәнлеге; ташбаҡа. *Диңгеҙ гөбөргәйеле. Һаҙ гөбөргәйеле. Йылан гөбөргәйеле.* ■ *Гөбөргәйел ҡурҡа .. ташынан сыҡмай. .. Бына гөбөргәйел һаҡ ҡына башын сығарҙы ла үләнгә үрелде.* С. Агиш.

**ГӨБӨРЛӨ** *и. диал.* Гөбөргәйел. [*Һәүбән — Нәркәскә:*] *Гөбөрлөнән олпатлы атаңа һин бирмәмен.* «Аҡбуҙат».

**ГӨБӨРЛӘТЕҮ** *ҡ.* Гөбөр-гөбөр иттереү. *Гөбөрләтеп һыйыр һауыу.* ■ *Тар көбөлә әсе ҡатыҡ бешеп торған Өмөгөлсөм тағы бер-ике гөбөрләтеп алды ла, туҫтаҡты тултырып айран алып килде.* З. Биишева.

**ГӨБӨРЛӘҮ** *ҡ.* Гөбөр-гөбөр итеү.

**ГӨБӘҘИӘ** *и.* Сөсө ҡамыр эсенә аҫтан ҡыҙыл эремсек, артабан дөгө ярмаһы, ит, кишер һ. б. ҡатлап һалып бешерелгән бәлеш төрө. *Гөбәҙиә бешереү.*

**ГӨҘМӘН** *и.* Һал йәки борамдағы ҡойроҡ ишкәге.

**ГӨЖ** *оҡш.* **1.** Үтәнән-үтә өргән көслө ел тауышын белдергән һүҙ. *Гөж итеү.* ■ *Миң дә миң саҡырым һуҙылған бар тимерсыбыҡтар гөж килә.* Д. Юлтый.

**2.** Шаулап торған күмәк тауышты белдергән һүҙ; шау-шыу. *Гөж' итеп тороу. Баҙар гөж килә.* ■ *Гөж килеп аллы-артлы йөрөгән машиналарҙың берәүҙәре баҫыуҙан килгән игенде бушата.., икенселәре таҙартылғанын тейәп элеваторға ҡарай юлға сыға.* Я. Хамматов. *Шул ерҙә бөтә халыҡ гөж килеп, ҡул сабып ебәргән* (Әкиәттән).

**ГӨЖГӨҮ** *ҡ. диал.* Көжгөү.

**ГӨЖЛӘТЕҮ** *ҡ.* Гөж (1 мәғ.) иттереү. *Ел гөжләтеп өрә.*

**ГӨЖЛӘҮ** *ҡ.* **1.** Гөж (1 мәғ.) итеү. *Дауыл гөжләй.* ■ *Аһ-зар менән гөжләп иҫкән елдәр таң еленә ҡушылып татланды.* Д. Юлтый. *Мин ултырам .. әсәй йоҡлай .. һулыштары елдәр гөжләүендә бер ишетелә һәм бер юғала.* Н. Нәжми.

**2.** Гөж (2 мәғ.) итеү, гөж килеү, ныҡ шаулау. *Старателдәр умарта ҡорто кеүек гөжләй башланы.* Я. Хамматов.

**ГӨЖЛӘШЕҮ** *ҡ. урт. ҡар.* **гөжләү** 2. *Шул саҡта йәштәр гөжләшеп, көлөшөп залға тула башланы.* А. Таһиров.

**ГӨЖӨЛДӘҮ** *ҡ.* Гөж (1 мәғ.) итеү, гөж килеү. *Ә ел гөжөлдәй, бәрәс дерелдәй.* Я. Ҡолмой.

**ГӨЖТ** *оҡш.* Ҡыҙыу итеп үтеп киткәндә ишетелеп ҡалған тауышты белдергән һүҙ. *Машина гөжт итеп үтеп китте.*

**ГӨЛ** [*фарс.*] *и.* Матурлыҡ өсөн өйҙә, баҡсала үҫтергән ваҡ һабаҡлы үҫемлек; сәскә. *Баҡса гөлө. Гөл баҡсаһы. Гөл кеүек ҡыҙ. Гөл орлоғо. Гөл сәскәһе. Гөл һабағы. Гөл ултыртыу. Гөл үҫтереү.* ■ *Тәҙрә төптәрендә гөлдәр хуш еҫ бөркөп, күпереп сәскә атып ултыра, ти* (Әкиәттән). *Баҡса алдарым һаҙ ғына, аҫыл гөлө аҙ ғына* (Халыҡ йырынан). **Алка[лы] гөл** *шул уҡ* **тамсы гөлө** (*ҡар.* **тамсы**). **Бәрхәт** (*йәки* **хәтфә, әҙрәс**) **гөлө** япрағы тимгел-тимгел йәшел, күк, ал төҫтәрҙән торған сәскәле, бегониялар ғаиләһенә ҡараған декоратив үҫемлек. **Зәғфран гөлө** сағыу һары, күк йәки ал сәскәле һуғанбаш үҫемлек. **Еҫле гөл** ирен сәскәлеләр ғаиләһенә ҡараған ваҡ япраҡлы, эфир майы булған хуш еҫле үҫемлек. **Йөҙйәшәр гөл** *диал.* алой. **Ҡайын гөлө** ҡайындар ғаиләһенә ҡараған аҡ сәскәле, ҡаты һабаҡлы бүлмә гөлө. **Ҡамыш гөл** амариллистар ғаиләһенә ҡараған ҡамыш һымаҡ һабаҡлы, ал, ҡыҙыл сәскәле һуғанбаш тамырлы бүлмә үҫемлеге. **Ҡына гөлө** һандал төҫтәге ваҡ сәскәләр ата торған бүлмә һәм баҡса үҫемлеге. **Ҡышлау гөл(ө)** *ҡар.* **ҡына гөлө.** *Тәҙрә төбөндә ике сулмәк ҡышлау гөлө ал сәскәләр атып ултыра.*

Ф. Иҫәнғолов. **Ҡыяҡ гөл** *кар.* **ҡамыш гөл. Райхан гөл(ө)** быуын-быуын теҙелеп торған зәңгәр сәскәле киң оҙонса япраҡлы хуш еҫле гөл. **Сәнскеле гөл** ситтәре сәнскеле итләс ҡыяҡ һабаҡлы тропик һәм субтропик үлән үҫемлек (fәҙәттә, медицинала ҡулланыла). **Тал гөлө** алһыу сәскә атҡан тал һымаҡ тар япраҡлы, ҡаты һабаҡлы гөл. **Тамсы гөлө** сәскәһе тамсы һымаҡ аҫылынып торған ал сәскәле бүлмә гөлө. *[Гөлзифа:] .. Их, бынауы тамсы гөл ни тиклем күп итеп сәскәгә төймәләнгән! Бер-ике көндән тотош сәскә булып ултырыр әле ул.* Б. Бикбай. **Үрмә(ле) гөл** үрмәле гөлдәр ғаиләһенә ҡараған, нимәгә булһа ла үрмәләп үҫә торған үлән үҫемлек. *Өй стеналарын һәр яҡлап ал сәскәләргә күмеп, үрмәле гөлдәр ятҡан.* Ф. Иҫәнғолов. *Үрмә гөл өй түбәһенә үрелә лә үрелә.* Ш. Биҡҡол. **Әрем гөлө** *кар.* **хризантема. Яран гөлө** бесәй табаны һымаҡ япраҡлы, төрлө төҫтәге өйкөм сәскәле еҫле гөл.

♦ **Ал да гөл** *кар.* **ал** [3]. **Гөл кеүек** бик һәйбәт, мул, яҡшы (тормош, көнкүреш тураһында). *Тормоштары гөл кеүек.* **Гөл булыу** һәйбәт, яҡшы булыу.

● *Бер көл булмайынса гөл булып булмай.* Әйтем.

**ГӨЛБАҘЫЯН** [*фарс.*] *и.* **1.** *шул уҡ* **баҙыян үләне** (*кар.* **баҙыян**).

**2.** *шул уҡ* **һары мәтрүшкә** (*кар.* **мәтрүшкә**).

**3.** (*баш хәреф менән*) Ҡатын-ҡыҙ исеме.

**ГӨЛ-БАҠСА** *и.* Гөл баҡсаһы. *[Һәүбән — Нәркәскә:] Алтын һарай, гөл-баҡсаң күңелем һыяр ер түгел, .. Уралыма тиң түгел.* «Аҡбуҙат».

**ГӨЛБОСТАН** [*фарс.*] *и.* **1.** *шигр.* Ғөл баҡсаһы. *Күңелем таша даръя һыуы менән илем — гөлбостаным пакларға.* Д. Юлтый. *Башҡортостан — гөлбостан, сөмбөлбостан, нурбостан.* Ш. Бабич.

**2.** (*баш хәреф менән*) Ҡатын-ҡыҙ исеме.

**ГӨЛБУЙ** [*фарс.*] *и.* Гөлдөң хуш еҫе.

**ГӨЛДӨР** *окш.* Күгәрсен гөрләгән һәм шуға оҡшаш тауышты белдергән һүҙ. *[Ауылға] .. кереүем булды, гөлдөр итеп ебәрҙе лә, ҡойоп ямғыр яуа башланы.* Ә. Вахитов.

**ГӨЛДӨР-ГӨЛДӨР** *окш.* Ҡабат-ҡабат гөлдөр иткән тауышты белдергән һүҙ. *Гөлдөр-гөлдөр гөрләһәң, йәм бөркөлә һәр ергә, күгәрсенем, гөрлә гел.* А. Игебаев. *Бер ситтәрәк уңған, таҙа егет гөлдөр-гөлдөр бойҙай елгәрә.* Ғ. Мәксүт.

**ГӨЛДӨРГӨҮ** *окш. кар.* **гөлдөр-гөлдөр.** *Гөлдөргөү-гөлдөргөү! Күгәрсендәр тәҙрә баштарында гөрләйҙәр.* Р. Ғарипов.

**ГӨЛДӨРЛӘТЕҮ** *к.* Гөлдөр-гөлдөр иттереү. *Гөлдөрләтеп берәү елгәргесен, төндә ҡара бойҙай елгәрә.* С. Ҡудаш.

**ГӨЛДӨРЛӘҮ** *к.* Гөлдөр-гөлдөр итеү. *Ҡайҙалыр бейектә ҡыр ҡаҙҙары ҡаңҡылдай, торналар ҡысҡыра, һаралйындар гөлдөрләй.* «Совет Башҡортостаны», 1966, 19 апрель.

**ГӨЛДӨРЛӘШЕҮ** *к. урт. кар.* **гөлдөрләү.** *Күгәрсендәр гөлдөрләшә ҡыйыҡтағы ояла.* Н. Иҙелбай.

**ГӨЛДӨРӘҮ** *к.* Гөлдөр итеү. *Көлтәселәр арбаларына тейәп бөткән сакта, күк күкрәй, гөлдөрәй башланы.* А. Таһиров.

**ГӨЛЗАР** [*фарс.*] *и.* Сәскәлек, гөл баҡсаһы.

**ГӨЛЙЕМЕШ** *и.* Роза сәскәлеләр ғаиләһенә ҡараған сәнскеле ҡыуаҡ үҫемлек һәм шул үҫемлектең емеше; әлморон. *Гөлйемеш орлого. Гөлйемеш ҡыуағы. Гөлйемеш сәскәһе.* ■ *Рамазан гөлйемеш өҙөп ҡапты ла ҡыуарған үлән өҫтөнә әйелде.* Р. Низамов.

**2.** (*баш хәреф менән*) Ҡатын-ҡыҙ исеме.

**ГӨЛЙЫҒАС** *и. диал.* Гөлйемеш.

**ГӨЛКӘЙ** *и.* **1.** Ҡатын-ҡыҙға әйтелә торған яратыу, иркәләү һүҙе. *Әйҙә, йәнкәй, әйҙә, гөлкәй, әйҙә тим гөл-баҡсаға.* Д. Юлтый. *Таңдар атҡан саҡта бер ҡыҙ һыктай, Мәҙинәкәйгенәм, гөлкәйем* (Халыҡ йырынан).

**2.** (*баш хәреф менән*) Ҡатын-ҡыҙ исеме.

**ГӨЛЛӘМӘ** *и. кит.* Гөл бәйләме; букет. *Ҡаһармандар һәйкәленә көн дә гөлләмәләр һала балалар.* А. Игебаев.

**ГӨЛЛӘНЕҮ** *к.* **1.** Гөл-сәскәгә күмелеү.

**2.** *күсм.* Һәйбәтләнеү, матурланыу (тормошҡа ҡарата). *Ер йәшәрер, бергә ил йәшәрер, яңы тормош тағы гөлләнер.* Т. Йәнәби.

**ГӨЛП** *окш. кар.* **гөлт.** *Гөлп итеү.*

**ГӨЛПЛӘҮ** *к.* Гөлп итеү, ҡапыл тоҡаныу. *Ҡоро утын гөлпләп яныл китте.*

**ГӨЛСИРЕН** [*фарс.*] *и. шигр.* Күксин, сирень. *Уфаларға барыуҙарым гөлсирен өсөн генә ..* (Халыҡ йырынан).

**ГӨЛСТАН** [*фарс.*] *и.* **1.** *шигр.* Гөлдәр, гөлбаҡсалар иле. *Тауҙар туғайҙар шундай йәмле — әйтерһең дә гөлстан.* Ш. Бабич.

**2.** (*баш хәреф менән*) Ҡатын-ҡыҙ исеме.

**ГӨЛСӘР** *и. кар.* **гәлсәр.** *Тәүге яҙҙың гөлсәр моңо ҡалһын күңелебеҙҙә.* Р. Бикбаев.

**ГӨЛ-СӘСКӘ** *и. йыйн.* Төрлө гөл һәм сәскәләр. *Йәйем минең гөлдәр баҡсаһы .. Ал розалар, баҙыян гөл-сәскәләр.* Ғ. Амантай.

**ГӨЛСӘСӘК** *и.* **1.** *кар.* **сәскә** 1.

**2.** Гөлйемеш сәскәһе. *Украина! Окоп ҡаҙҙым мин гөлсәсәгең үҫер урында.* М. Кәрим.

**3.** (*баш хәреф менән*) Ҡатын-ҡыҙ исеме.

**ГӨЛТ** *окш.* **1.** Уттың ҡапыл тоҡанып китеүен аңлатҡан һүҙ; гөлп. *Гөлт итеү.* ■ *Бына еүеш сыбыҡ бер аҙ сыртлап ятты ла, гөлт итеп яныл та китте.* К. Кинйәбулатова.

**2.** *күсм.* Таҙа, матур итеп йыйыштырылған ерҙе һүрәтләгәндә әйтелә; ялт. *Өй эсе гөлт итеп тора, ти. Ул түшәмгә тиклем өйөп ҡуйылған урын-ер нәмәләре, аҫыл келәмдәр күҙҙең яуын алып тора, ти* (Әкиәттән).

**ГӨЛТЛӘҮ** *к.* Ҡапыл ялҡынланып тоҡаныу. *[Ут] әүеҫлек башындағы бесәнгә гөлтләп тоҡанды.* Ж. Кейекбаев.

**ГӨЛТӨЛДӘТЕҮ** *к.* Гөлт иттереү, ҡапыл тоҡандырыу. *Гөлтөлдәтеп усаҡ ҡабыҙҙым.* А. Игебаев.

**ГӨЛТӨЛДӘҮ** *к.* Гөлт итеү, ҡапыл ялҡынланып, тоҡанып китеү.

**ГӨЛӘП** [*фарс.*] *и. диал.* Гөлйемеш. *Барсаһынан хуш гөләптең еҫе, гөлдәр эсендә гөләп нәфисе.* М. Фәйзи.

**ГӨМАН** [*фарс.*] *и.* **1.** Фараз, уй. *Гөман менән генә һөйләү.* ■ *Дәүләткә әҙәм бармы котормаған, эстәрен бәд гөманға тултырмаған.* Аҡмулла. / Шик, шөбһә. *Хөкүмәт әүәлге налогтар өҫтөнә*

.. *туйҙарынан пошлина алырға низам сығарҙы. Был ... күп һуҙҙәргә һәм күп гөмандарға сәбәп булды.* М. Һаҙыев. *Миңә лә киләсәк бер көн — был ғүмерем көҙө гөманһыҙ; ҡалыр минең ҡоро тәнем.* С. Яҡшығолов.

**2.** *күсм.* Ҡарындағы бала.

□ **Гөман итеү** шөбһәләнеү, уйлау.

**ГӨМАНЛЫ** *с.* Буйында булған, ауыры булған; ауырлы. *[Егет:] Минең ҡатыным гөманлы булып ҡалғайны, ҡыҙым бармы, улым бармы икән* (Әкиәттән).

**ГӨМБӨР** [1] *оҡш.* **1.** Бушлыҡта яңғырап сыҡҡан тауышты белдергән һүҙ.

**2.** Тәрән һыуға ҙур ауыр нәмә төшкәндә йәки шыйыҡ нәмәне бешкәндә сыҡҡан тауышты белдергән һүҙ. *Гөмбөр итеү.*

**ГӨМБӨР** [2] *и.* Балыҡ өшкөтә торған тупалсаҡ башлы оҙон таяҡ; дөмбөр.

**ГӨМБӨР-ГӨМБӨР** *оҡш.* **1.** Ҡабат-ҡабат гөмбөр [1] иткән тауышты белдергән һүҙ. *Гөмбөр--гөмбөр итеү.*

**2.** Алыҫта һөйләшкән күмәк кешенең яңғырап ишетелгән тауышын белдергән һүҙ. *Арбалар шылтыраны, аттар башҡырышты. Кешеләрҙең гөмбөр-гөмбөр һөйләшкән тауыштары, .. оҙатыусыларҙың хушлашҡаны ишетелде.* Һ. Дәүләтшина.

**ГӨМБӨРЛӘТЕҮ** *к.* Гөмбөр-гөмбөр иттереү. *Егет, елкенсәктәрҙең гөмбөрләтеп һаба бешкән тауыштары ишетелде.* «Ҡуҙыйкүрпәс менән Маянһылыу».

**ГӨМБӨРЛӘҮ** *к.* Гөмбөр итеү. *Тауышы ниндәй икән бының? Моғайын, тауышы мәмерйә эсе гөмбөрләгән һымаҡ, яңғырап сыға торғандыр.* Б. Бикбай.

**ГӨМБӨРЛӘШЕҮ** *к. урт. ҡар.* **гөмбөрләү.** *Уларҙың гөмбөрләшкән тауышына арттағы сананан икенсе чекист Волков һикереп төшөп, ҡыуып етте.* Һ. Дәүләтшина.

**ГӨМБӘ** *и. диал.* Бәшмәк.

**ГӨМБӘҘ** *и. диал.* Көмбәҙ.

**ГӨМП** *оҡш.* Эсе бушаҡ нәмәгә һуҡҡанда яңғырап сыҡҡан тауышты белдергән һүҙ. *Гөмп итеү.*

**ГӨМП-ГӨМП, гөмп тә гөмп** *оҡш.* Ҡабат--ҡабат гөмп иткән тауышты белдергән һүҙ. *Гөмп-гөмп итеү. Гөмп-гөмп килеү.* ■ *[Зиннәт] .. Солтандың ҡайһы ере тура килһә, шул еренә гөмп тә гөмп бирә башланы.* З. Ураҡсин.

**ГӨМПӨЛДӘТЕҮ** *к.* Гөмп-гөмп иттереү.

**ГӨМПӨЛДӘҮ** *к.* Гөмп-гөмп итеү. *Гөмпөлдәп тороу.*

**ГӨМРАҺ** [*фарс.*] *с. иҫк. кит.* Юлдан яҙған; аҙғын. *Урыҫ йортонда барҙыр нигилистар, би тәртип бәлки гөмраһ хунриздар.* М. Өмөтбаев.

□ **Гөмраһ булыу** ҡотҡоға бирелеү, аҙыу. *Йосоп әйтте: Йә кәрҙәштәр, быны ҡылмаң [ҡойоға һалмағыҙ], шайтан һүҙенә гөмраһ булып ..* «Йосоп вә Зөләйха».

**ГӨНАҺ** [*фарс.*] *и.* **1.** *дини* Хоҙай тарафынан хупланмай тип иҫәпләнгән эш; яҙыҡ. *Гөнаһ булыу. Гөнаһҡа ҡалыу. Гөнаһ ҡылыу. Гөнаһ эшләү.* ■ *Яланбикәне үҙенең сабыйы янына күмделәр. Уны йыйышырға килгән бисәләр: «Ер күтәрмәҫлек ауыр гөнаһ эшләгән был бәндәһен алла үҙе ярлыҡаһын инде»,— тип теләнеләр.* Һ. Дәүләтшина.

**2.** Ғәҙәткә һыймаған эш; ғәйеп. *Миңлекамал, ҡыҫып неҫкә билкәйеңде, тик бер генә үпһәм дә шул миңкәйеңде, ниндәй яза бирһәләр ҙә гөнаһыма, әйтер инем ирештем тип мораҙыма.* М. Кәрим. **Гөнаһты йыуыу** гөнаһты яҡшы эш менән бөтөрөү.

♦ **Гөнаһ шомлоғо** 1) бәхетһеҙлек, бәлә, ҡаза. *[Ҡолош мулла:] Ауылыбыҙҙа мәсет-мәҙрәсәләр һалыныр. Илебеҙ гөнаһ шомлоғонан сығып, дин, ислам ҡосағында йәшәр.* Т. Хәйбуллин; 2) *инш. мәғ.* шелтәләүҙе йәки үкенеүҙе белдергәндә әйтелә. *Ҡоштар серелдәүен тыңлап, ҡояшҡа ҡыҙынып ята торғас, ойоп киткәнмен, гөнаһ шомлоғо.* Н. Ҡәрип. **Гөнаһ шомлоғона ҡаршы** *инш. мәғ.* бәхетһеҙлеккә ҡаршы, бәләгә ҡаршы. *Гөнаһ шомлоғона ҡаршы, ҡапҡа төбөндә, магазинға барырға сыҡҡан ике ҡатын баҫып тора ине.* И. Абдуллин. **Гөнаһ шомлоғо төшөү** (*йәки* **тейеү**) бәхетһеҙлек, бәлә килеү.

**ГӨНАҺҠАР** [*фарс.*] *с.* **1.** *дини* Гөнаһ эштәр эшләүсе, гөнаһлы.

**2.** *иҫк. кит.* Енәйәт ҡылыусы.

**ГӨНАҺЛАНЫУ** *к.* Гөнаһ эш эшләү, гөнаһлы, ғәйепле булыу.

**ГӨНАҺЛЫ** *с.* Гөнаһы булған, гөнаһҡа ҡалған, гөнаһ ҡылған. *Гөнаһлы булыу.* ■ — *Бушты һөйләйһең дә баһа, килен, гөнаһлы булып. Хәҙрәт менән сағыштырырға яраймы ни, уның өйөндә шүрлек тулы көрьән, үҙе көнө-төнө намаҙ уҡый.* Т. Йәнәби.

**ГӨНАҺҺЫҘ** *с.* Гөнаһы булмаған, ғәйепһеҙ; саф. *Һис гөнаһһыҙ үлергә киткән үҙ улдарын ҡыҙғанып, әй гөнаһһыҙ балалар тип, тыуған--үҫкән ер илай* (Бәйеттән).

**ГӨНАҺШОМЛОҠ** [*фарс.*] *и. шул уҡ* **гөнаһ шомлоғо** (*ҡар.* **гөнаһ**). *[Сабир мулла:] Бик күп халыҡ күрҙем. Ғәрәсәтме әллә тип торһам, ни күҙем менән күрәйем, сират күперенең төбөндә сират көтөп торалар икән, ниндәй гөнаһшомлоҡ менәндер сират күпере ватылған.* Б. Ишемғол.

**ГӨП** *оҡш.* Йомшағыраҡ ергә ауыр нәмә бәрелгәндә сыҡҡан тоноҡ тауышты белдергән һүҙ. *Гөп итеү. Гөп итеп ҡалыу.*

**ГӨП-ГӨП, гөп тә гөп** *оҡш.* Ҡабат-ҡабат гөп иткән тауышты белдергән һүҙ. *Гөп-гөп итеү. Гөп тә гөп килеү.*

**ГӨПӨЛДӘТЕҮ** *к.* Гөп-гөп иттереү. *Бикәс тракторист егеттең уңәс түймәһен ҡаушырып эләктереп ҡуйҙы ла, гөпөлдәтеп арҡаһынан һөйҙө.* Ф. Иҫәнғолов.

**ГӨПӨЛДӘҮ** *к.* Гөп-гөп итеү. *Берҙәм аяҡ баҫҡан тауыштар гөпөлдәп ишетелә.* Р. Ниғмәти.

**ГӨППӘҺЕНӘН** *р.* Самаһыҙ күп. *[Карам] йылына .. мотлаҡ ҡайтып йөрөнө. Сәй-шәкәрен .. кейем-һалымын, донъя кәрәген гөппәһенән йөкмәр ине.* Т. Килмөхәмәтов.

**ГӨР** *оҡш.* **1.** Күгәрсен тауышын белдергән һүҙ. *Гөр килеү.*

**2.** Йомшаҡ ритмик рәүештә ҡабатланған тауышты белдергән һүҙ. *Инде һуңғы кәбәндәге көлтәләрҙе һуғырға тотондолар. Молотилка гөр килә. Күңелле.* Б. Бикбай.

**3.** Шәп янған ут тауышын белдергән һүҙ. *Гөр итеү.*

**4.** Күмәк халыҡ тауышын белдергән һүҙ. *Гөр итеү.* ■ *Мәктәп эсе балалар тауышынан гөр килә.. Балалар араһында ниндәйҙер бик ҡыҙыу бәхәс бара.* Б. Мирзанов. / *күсм.* Күңелле эш, тормош шауын белдергән һүҙ. *Кешеләр ысын хеҙмәт дәрте менән тоҡанып, гөр килеп эшләне. Бер байрам ғына булып ҡалды ул саҡ.* Б. Бикбай. *Колхозсылар йырлап килә гөр килтереп ауыл урамын.* Б. Ишемғол.

**ГӨРАЗ** [*фарс.*] *с. иск. кит.* Батырлыҡ, тәүәккәллек. *Һәр бер эштә гөраз берлә талашабыҙ.* М. Татлыбаев.

**ГӨРГӨЛДӘК** *и.* Йәшенешеп уйнай торған балалар уйыны; йәшенмәк (бер төркөм бала һанашып, берәүҙе көтөүсе итеп ҡалдыра; көтөүсе күҙен ҡаплап, гөр-гөр итеп көйләп, башҡалар йәшенеп бөткәнсә тора; кемде башта тапһа, артабан шул көтөүсе була һәм уйын яңынан дауам итә). *Гөргөлдәк уйнау.* ■ *Кистән бик оҙаҡ итеп урамда гөргөлдәк уйнағайныҡ.* Н. Мусин.

**ГӨРГӨЛДӘҮ** *ҡ.* Гөргөлдәк уйнағанда көтөүсе булыу (күҙҙе йомоп гөр-гөр тип тороу).

**ГӨР-ГӨР** *оҡш.* Ҡабат-ҡабат гөр иткән тауышты белдергән һүҙ. *Гөр-гөр итеү.* ■ *Гөр-гөр килеп, яр буйында эберсендәр күмәкләшеп гөрләйҙәр.* Т. Йәнәби. *Әбей өйҙә аш әҙерләп йөрөй, кухняһында гөр-гөр газ яна.* Т. Арслан.

**ГӨРГӨС** *и.* **1.** Ниҙе лә булһа этеп шылдыра, ышыра торған ҡорамал. *Гөргөс менән ҡар ышырыу.*

**2.** *диал.* Ирәк. *Тирене гөргөс менән ҡырыу.*

**ГӨРГӨҮ** *ҡ. диал.* Көргөү.

**ГӨРЗӨЙ** [*фарс.*] *и.* Боронғо һуғыш ҡоралы; суҡмар. *Ҡулымда булманы гөрзөй, бына үкенес, тороп әмenә алды бер таш.* Һ. Салихов.

**ГӨРЛӨ** *с.* Гөрләп, ҡайнап торған, шаулы күңелле. *Гөрлө ҡала.* ■ *Хәҙер әллә кистәр шаулыраҡмы, гөрлөрәкме әллә таңыбыҙ.* Р. Ниғмәти.

**ГӨРЛӘПӘ** *и. диал.* Ҡаҡы.

**ГӨРЛӘТЕҮ** *ҡ.* **1.** Гөр (2 мәғ.) иттереү. *Машинаны гөрләтеү.*

**2.** Күмәк кешене гөр (4 мәғ.) килтереү, гөрлө итеү. *Театр килгән, тигән хәбәр бөтә ауылды гөрләтте.* / *күсм.* Күңелле, шәп итеп эшләү; гөр (4 мәғ.) килтереү. *Гөрләтеп донъя көтөү. Гөрләтеп түй яһау.* ■ *[Солтановтың] кәйефе лә һәйбәт тойола: «Беҙҙең егеттәргә эш сыҙаймы ни ул, гөрләтәбеҙ!» — тип кенә ебәрә.* Н. Мусин.

**ГӨРЛӘҮ** *ҡ.* **1.** Гөр (1, 2 *мәғ.*) итеү. *Күгәрсендәр гөрләй. Гөрләп тороу.* ■ *Тирмән генә, киндер туҡмаған кеүек, бер төрлө, бер тауышлы, бер тигеҙ итеп, талғын ғына тыҡылдай, гөрләй.* Н. Ҡәрип.

**2.** Күмәкләп шаулау; шау килеү. *Ҡала гөрләй, музыка марш уйнай, ҡыҙыл флаг елгә елберләй.* Б. Ишемғол. / *күсм.* Бик күңелле, шәп булыу. *Тормош гөрләй.* ■ *Тимерлектә һабан төҙәтәләр, гөрләп үҫһен өсөн игендәр.* Р. Ниғмәти.

**ГӨРЛӘҮЕК** *и.* Яҙын ҡар эреүҙән йәки көслө ямғырҙан барлыҡҡа килеп, гөрләп аҡҡан һыу. *Шәмсетдин .. госпиталдә байтаҡ ятҡандан һуң, яҙын тауҙарҙан гөрләүектәр сылтырап аҡҡанда, тыуған ауылына ҡайтты.* Р. Низамов. *Йәшен йәшнәп, ямғыр яуып үтте... Гөрләүектәр аға тулышып.* Ш. Бикҡол.

**ГӨРЛӘШЕҮ** *ҡ.* **1.** *урт. ҡар.* **гөрләү.** *Күгәрсендәр гөрләшә. Балалар гөрләшә.* / *күсм.* Татыу, матур итеп һөйләшеү. *Ҡуҙыйкүрпәс менән Маянһылыу .. бөтә донъяларын онотоп, пар күгәрсендәй гөрләшеп, бик оҙаҡ ултырҙылар,* ти. «Ҡуҙыйкүрпәс менән Маянһылыу».

**2.** *күсм.* Шат, матур итеп күңел асып йәшәү. — *Инде донъялар бер аҙ тынысланды. Ошондай мәлдә лә һыйлашып, гөрләшеп ҡалмаһаң, донъяның ҡыҙығын ҡасан күрәһең?* Ғ. Дәүләтшин. *Һабан түйҙарындағы шикелле бергә гөрләшеп, аралашып, бер туған булып йәшәргә өйрәнгән ауыл халҡы.* Х. Назаров. *Гөрләшеп, дәртле минуттар остолар моңдар менән.* Ш. Бабич.

**ГӨРӨЗДӘ** [*рус.* груздь] *и.* Уртаһы соҡорораҡ булып торған киң башлы, ҡыҫҡа йыуан һабаҡлы, ҡалпағы аҡ йәки һарғылт бәшмәк. *Гөрөздә тоҙлау.*

**ГӨРӨЛДӨ** *и.* Гөр-гөр иткән тауыш. *Далалағы уттарҙы күргәс, тракторҙар гөрөлдөһөн ишеткәс, тракторҙарҙың эше күҙ алдына килә.* А. Карнай. *Йылғалар тау-таш араларынан шарлауыҡтар яһап төшәләр, гөрөлдөләре әллә ҡайҙан ишетелә.* Ғ. Ибраһимов.

**ГӨРӨЛДӘК** *и.* **1.** Йылғаларға өҫтән, тар ерҙән төшөп гөрөлдәп аҡҡан бәләкәй шарлауыҡ.

**2.** *диал.* Гөргөлдәк.

**ГӨРӨЛДӘТЕҮ** *ҡ.* Гөр-гөр иттереү. *Машинаңды «һә» тигәнсе алып сығып гөрөлдәтеп эшләтеп ебәрәһең дә теләгән ереңә .. елдерәһең.* Д. Буләков.

**ГӨРӨЛДӘҮ** *ҡ.* Гөр (1—3 мәғ.) итеү. *Гөрөлдәп яныу. Күгәрсендәр гөрөлдәй. Трактор гөрөлдәп алға бара, .. кәҫтәр тулҡынланып-тулҡынланып ятып ҡалалар.* Ә. Вәли. // *Двигателдең гөрөлдәүе мастерской эсен өҙлөкһөҙ яңғырата.* А. Карнай. *Һабансылар йыры, тракторҙар гөрөлдәүе баҫыу өҫтөндә ..* Ғ. Сәләм.

**2.** *диал.* Шарлауыҡ.

**ГӨРӨЛДӘШЕҮ** *ҡ. урт. ҡар.* **гөрөлдәү.** *Гөрләүектәр гөрөлдәшеп, яҙ ҡапҡаһын ҡаҡтылар.* М. Кәрим.

**ГӨРӨН** *и.* **1.** Ямғыр яуғандан һуң йылға булып аҡҡан һыу. *Урамда яҙ гөрөн йырып йөрөй, ялан аяҡ малай шикелле.* Ә. Әхмәтҡужин.

**2.** *диал.* Гөрләүек. *Ашығып ҡаға тауҙан гөрөндәр, ергә килде яҙ тағы.* Ғ. Рамазанов.

**ГӨРӨНДӨ** *и. диал.* Гөрләүек. *Ыуыҙ үлән баш төрттө. Ҡуҙғалды гөрөндөләр.* А. Игебаев.

**ГӨРӨҮ** *ҡ.* **1.** Ниҙе лә булһа тотош бергә этеп шылдырыу; ышырыу. *Ҡарҙы гөрөп өйөү.*

**2.** *диал.* Ирәкләү. *Тирене гөрөү.*

**ГӨРҪ** *оҡш.* Ҙур, ауыр нәмә юғарынан ауып төшкәндә сыҡҡан тонок тауышты белдергән һүҙ. *Гөрҫ итеү. Гөрҫ итеп ҡалыу.* ■ *Баһадир партизан сайҡалып китте лә, дауыл ауҙарған ағас кеүек, гөрҫ итеп ергә ауҙы.* И. Ғиззәтуллин. *Түшәмдәге кәкре сөй һурылып сыҡты ла, [мин] иҙәнгә гөрҫ итеп йығылып төштөм* (Әкиәттән).

**ГӨРҪ-ГӨРҪ** *оҡш.* Ҡабат-ҡабат гөрҫ иткән тауышты белдергән һүҙ. *Гөрҫ-гөрҫ итеү.* ■ *Бик*

*алыҫтан гөрҫ-гөрҫ иткән һаңғырау тауыштар ишетелә башланы. Улар ер аҫтынан килгән кеүек була.* Д. Юлтый.

**ҒӨРҪЛӘҮ** *к.* Гөрҫ иткән тауыш сығарыу. *Гөрҫләп ауыу. Гөрҫләп барып төшөү.* ■ *Тик бары-бер, вакыттары еткәс, [карагайҙар] ҡаяларҙан гөрҫләп ауалар.* Р. Мифтахов.

**ГӨРҺ** *окш. кар.* **гөрҫ.**

**ГӨРҺӨЛДӘТЕҮ** *к. йөкм. кар.* **гөрһөлдәү.** *Минең .. иптәштәрем күл буйында кош аткандарҙыр. Ә мин,— эһә, минән башка ла кешеләр бар икән, гөрһөлдәтәләр әле,— тип шатланғанмындыр.* Б. Хәсән. *Мин ярһыган үгеҙҙең мөгөҙөнән маткып тотоп алдым да,.. гөрһөлдәтеп ергә аунатып ебәрҙем.* С. Кулибай.

**ГӨРҺӨЛДӘҮ** *к.* Гөрҫ итеү. *Таң атып аҙ ғына яктыра башлау менән туптар гөрһөлдәй, пулеметтар татылдай .. башланы.* И. Көҫәпҡол. *[Садрислам] ергә гөрһөлдәп коланы.* Ф. Иҫәнғолов.

**ГӨРҺӨЛДӘШЕҮ** *к. урт. кар.* **гөрһөлдәү.** *Таштар .. гөрһөлдәшеп оса түбәнгә.* Ғ. Дәүләтов.

**ГӨР-ШАУ** *окш. кар.* **шау-гөр.** *Гөр-шау килеп торған туғайҙы алтын төн тынлыгы капланы.* Б. Бикбай. *Халык шатлыктан гөр-шау килә, һәр кем теләгәнсә һыу ала, ти* (Әкиәттән).

**ГӨРШӨЛДӘТЕҮ** *к. кар.* **ғуршылдатыу.** *Ат үләнде шарт-шорт өҙөп, гөршөлдәтеп ашарға тотонды.* И. Көҫәпҡол.

**ГӨРШӨЛДӘҮ** *к. кар.* **ғуршылдау.**

**ГӨРӘНКӘ** [*рус.* гран ⟨ *лат.*] *и.* **1.** Метрик система индерелгәнгә ҡәҙәрге аптека үлсәүе берәмеге (0,062 грамға тигеҙ). *[Фатима Умырҙакка:] Ҡайһы бер кешелә бит утыҙ-кырк гөрәнкә көмөш бар.* Й. Гәрәй.

**2.** *диал. кар.* **ҡаҙаҡ** [1]. *[Кыҙҙар:] Улай булһа, һин беҙҙән бер тоҡ күмер, бер-ике гөрәнкә ярма, биш-алты киҫәк ит алып сык* (Әкиәттән).

**ГРАВЁР** [*рус.* ⟨ *фр.*] *и.* **1.** Гравировка яһау буйынса белгес.

**2.** Гравюра яһаған художник.

**ГРАВИРО́ВКА** [*рус.*] *и.* Ағас, металл, һөйәк һ. б. нәмәләргә соҡоп яһалған рәсем, биҙәк, яҙма. *Гравировка яһау. Гравировка яһатыу.*

**ГРАВИТА́ЦИЯ** [*рус.* ⟨ *лат.*] *и.* Бөтә донъя тартылышы; йыһандағы бөтә есемдәрҙең бер-береһенә тартылыу үҙсәнлеге. **Гравитация көсө** күк йөҙө есемдәренең, шулай уҡ Ерҙең әйләнә-тирәләге есемдәрҙе үҙҙәренә тартыу көсө. **Гравитация ҡыры** есемдәрҙең бер-береһенә тартылыуын күсереүсе ҡыр.

**ГРАВЮ́РА** [*рус.* ⟨*фр.*] *и.* **1.** Ағас, металл, быяла һ. б. нәмәләргә соҡоп төшөрөлгән рәсем һәм шуның ҡағыҙға баҫылған күсермәһе. *Төҫлө гравюра. Гравюра яһау.*

**2.** Ошо ысул менән яһалған сәнғәттең графика бүлеге. *Гравюралар күргәҙмәһе.*

**ГРАВЮРЛАТЫУ** *к. йөкм. кар.* **гравюрлау.**

**ГРАВЮРЛАУ** *к.* Ағаска, ташҡа соҡоп һүрәт төшөрөү.

**ГРАДА́ЦИЯ** [*рус.* ⟨ *лат.*] *и.* Предмет йәки күренештәрҙең бер хәлдән (нәмәнән) икенсе хәлгә (нәмәгә) күскәндәге әҙмә-әҙлелеге. *Баҫым һәм паузаларҙағы градация, деградациялар ҙа уҡыуҙы, һөйләүҙе тәьҫирле итә. Градация тауышты баҫкыс-баҫкыс юғары күтәреп, пафос менән әйтеү була.* З. Иҙәүләтов.

**ГРАДИРЛАУ** *к.* Градирняла ҡайнатып, тоҙло иретмәнең һыуын бөтөрөү.

**ГРАДИ́РНЯ** [*рус.*] *и.* **1.** Тоҙ иретмәһен ҡуйыртыу һәм уның һыуын быуға әйләндереп тоҙ ала торған ҡоролма.

**2.** Промышленноста эҫе һыуҙы һыуытыу өсөн ҡулланылған башнялы ҡоролма.

**ГРА́ДУС** [*рус.* ⟨ *лат.*] *и.* **1.** Геометрик мөйөш һәм дуғаның дәүмәлен үлсәй торған берәмек (түңәрәктең 1/360 өлөшөнә тигеҙ). *20 градуска тигеҙ мөйөш.*

**2.** Һыу, һауа, тән һ. б. температураһын үлсәй торған берәмек. *Тәндәге ҡыҙыулыҡ, температура 38, 39 градустан түбән төшкәне юҡ.* Д. Юлтый.

**3.** Араҡы, шарап һ. б. эсемлектәрҙә спирттың процентын күрһәткән берәмек.

**ГРАДУСЛЫ** *с.* **1.** Күпмелер градуска тиң. *Тупһан градуслы мөйөш. Ҡырҡ градуслы һыуыҡ. Егерме градуслы шарап.*

**2.** *һөйл.* Юғары градуска эйә булған, ҡеүәтле, көслө. *Градуслы эсемлек.*

**ГРА́ДУСНИК** [*рус.*] *и.* Температураны үлсәй торған прибор; термометр. *Ғәйшә килде. Бөтәбеҙгә лә градусник ҡуйып, температураны үлсәне.* С. Агиш. *Градусникта терегөмөш туңа, ҡалын туңа боҙҙар йылгала.* М. Хәй.

**ГРАЖДАН** [*рус.* гражданин] *и.* **1.** Билдәле бер дәүләттә даими рәүештә йәшәп, шул дәүләттең законлары нигеҙендә бөтә хоҡуҡ менән файҙаланған һәм законлағы бөтә бурысты үтәгән кеше. *Советтар Союзы гражданы.*

**2.** *югары* Үҙ тормошон ил мәнфәғәттәренә буйһондорған кеше; йәмғиәттең юғары аңлы ағзаһы. *Граждан булыу.* ■ *Илен һөйгән ысын граждан булып тура ҡарап минең күҙемә .. яуап бир һин, иптәш .. минең һүҙемә.* С. Ҡудаш.

**3.** Кешегә рәсми өндәшеү һүҙе. *Граждандар! Беҙҙең республикабыҙ өсөн критик момент кил[де].* Һ. Дәүләтшина.

◆ **Граждандар авиацияһы** дәүләттең хәрби иҫәпкә инмәгән авиацияһы. **Граждандар һуғышы** *кар.* **һуғыш.**

**ГРАЖДАНИ́Н** [*рус.*] *и.* Граждан (1 мәғ.) ир кеше.

**ГРАЖДА́НКА** [1] [*рус.*] *и.* **1.** Граждан (1 мәғ.) ҡатын-ҡыҙ.

**2.** Ҡатын-ҡыҙға мөрәжәғәт итеү һүҙе.

**ГРАЖДА́НКА** [2] [*рус.*] *и. һөйл.* Хәрби булмаған тормош (хәрбиҙәргә ҡарата). *Гражданкаға күсеү.* ■ *Матвей үҙе хакында һөйләп бармай. .. беҙ уның гражданкала ниндәй тормош кисереүен белмәйбеҙ.* Н. Мусин.

**ГРАЖДАНЛЫҠ** *и.* **1.** Билдәле бер дәүләттең гражданы (1,2 мәғ.) булған хәл. *Гражданлыҡ бурысы. Гражданлыҡ тойғоһо. Гражданлыҡ биреү. Гражданлыҡ алыу.* ■ *СССР-ҙа билдәләнгән берҙәм союз гражданлығына ярашлы рәүештә БАССР-ҙың һәр гражданы РСФСР һәм СССР гражданы булып тора.* Башҡорт АССР-ының Конституцияһы, 1984. *Революцион романтика менән һуғарылған «Ырғыҙ» романын*

*ижад итеүе Һәҙиә Дәүләтшинаның граждандык подвигы ине.* М. Минһажетдинов.

**2.** *һөйл.* Хәрби булмаған, ғәҙәти тормош. *Граждандык шарттарында йәшәү.*

◆ **Граждандык хоҡуғы алыу** халыҡ тарафынан танылып, ҡабул ителеү. *Башкорт совет поэзияһында граждандык хокугы алган, укыусылар күңеленә инеп урынлашкан шагирҙар бик күп.* Ғ. Хөсәйенов.

**ГРАЖДА́НСКИЙ** [*рус.*] *с. һөйл.* Хәрби булмаған. *Гражданский халык.* ▬ *1796 йылда наместничество уның башында хәрби һәм гражданский губернаторҙар торган Ырымбур губернаһы итеп үҙгәртеп төҙөлә.* Б. Юлдашбаев.

**ГРАМЛАУ** *ҡ.* Грамға һалыу. *Грамлап үлсәү. Грамлап бүлеү.*

**ГРАММ** [*рус.* 〈*фр.*] *и.* Метрик үлсәү системаһындағы ауырлыҡ берәмеге (1 кубик сантиметр таҙа һыу ауырлығына тиң).

**ГРАММАТИК** *с.* Грамматикаға мөнәсәбәтле, грамматикаға бәйле. *Грамматик категория. Грамматик кагиҙә.* **Грамматик хата** грамматика ҡағиҙәһен боҙған яҙыу хатаһы.

**ГРАММА́ТИКА** [*рус.* 〈 *гр.*] *и.* **1.** Тел ғилеменең һүҙ һәм һөйләм төҙөлөшөн өйрәнә торған бүлеге. *Сагыштырма грамматика. Тарихи грамматика.*

**2.** Теге йәки был телдә һөйләм эсендәге һүҙҙәрҙең үҙгәреү һәм үҙ-ара бәйләнешкә инеү тәртибе. *Башкорт теленең грамматикаһы.* / Телдең төп ҡағиҙәләре яҙылған дәреслек. *1925 йылда башкорт теленең беренсе грамматикаһы яҙылып, баҫтырып сыгарылды.* Ҡ. Әхмәр.

**ГРАММ-А́ТОМ** [*рус.*] *и. хим., физ.* Үҙенең атом массаһына тура килгән химик элементтың грамдар һаны.

**ГРАММ-МОЛЕ́КУЛА** [*рус.*] *и. хим., физ.* Үҙенең молекула массаһына тура килгән ябай һәм ҡатмарлы химик матдәнең грамдар һаны.

**ГРАММОФО́Н** [*рус.* 〈 *гр.*] *и.* Махсус пластинкаға яҙылған тауышты ҡабаттан ишеттерә торған рупорлы музыкаль аппарат. *Граммофон пластинкаһы. Граммофон уйнатыу.* ▬ *Граммофондар матур уйнай торбаһы киңгә күрә* (Халыҡ йырынан).

**ГРА́МОТА** [*рус.*] *и.* **1.** Уҡыу-яҙыу белеме. *Грамота белеү* / Ниндәй ҙә булһа бер өлкәләге башланғыс белем. *Музыканы аңлау өсөн нота грамотаһын белергә кәрәк.* Ғ. Сөләймәнов.

**2.** Берәй нәмәне раҫлаған рәсми документ. *Ышаныс грамотаһы. Мактау грамотаһы. Грамота менән бүләкләү.* ▬ *Был Мәскәү дәүләте алган көндән булды ҙур түрәләр башкорт иленән. Улар старшиналар тип аталмыш, еренә һәм грамота — хат алмыш.* М. Өмөтбаев.

◆ **Тарханлыҡ грамотаһы** *ҡар.* **тарханлыҡ.**

**ГРАМОТАЛЫ** *с.* **1.** Дөрөҫ уҡый-яҙа белгән./ *күсм.* Ниндәйҙер өлкәлә уҡымышлы, белемле. *Грамоталы инженер.*

**2.** Хатаһыҙ, дөрөҫ (яҙыуға ҡарата). *Балалар башлангыс кластарҙа аңлап укыу, грамоталы итеп яҙыу .., күнекмәләре менән бер рәттән йәмгиәт тураһында тәүге фәнни төшөнсә алалар.* «Башҡортостан уҡытыусыһы», 1965, № 1. / *күсм.* Ниндәйҙер өлкәлә төп талаптарға яуап биреп, фәнни яҡтан дөрөҫ башҡарылған. *Грамоталы чертёж.*

**ГРАМОТАҺЫҘ** *с.* **1.** Дөрөҫ уҡый-яҙа белмәгән; наҙан. / *күсм.* Ниндәйҙер өлкәлә уҡымышһыҙ, белемһеҙ. *Грамотаһыҙ инженер.*

**2.** Хаталы (яҙыуға ҡарата). / *күсм.* Ниндәйҙер өлкәлә төп талаптарға яуап бирмәгән, фәнни яҡтан дөрөҫ башҡарылмаған. *Грамотаһыҙ чертёж.*

**ГРАМОТЛЫ** *с. һөйл.* Грамоталы. *[Фәхри:] Тимер йәш, грамотлы егет. Атаһы ла уның бик ипле кеше ине.* Б. Бикбай.

**ГРАН** [*рус.* грань] *и. тар.* Ике ер сиге. *Партизандар отрядының алдагы частары .. Каратанау һөҙгенә килеп етеп, казачий гранга үтә торган оло юлды бүлеп алган ине инде.* Һ. Дәүләтшина.

**ГРАНА́Т** [1] [*рус.* 〈 *лат*] *и.* **1.** Ҡыҙыл сәскәле, ҡыҙыл ҡаты йомро емешле йылы яҡ ағасы йәки ҡыуағы; анар. *Гранат сәскәһе.*

**2.** Шул ағастың ҡыҙыл ҡабыҡлы, эсеидә ваҡ ҡыҙыл бөрләгән һымаҡ уҡмашып торған емеше. *Посылка алдык бөгөн. Асып кына ебәрһәк, груша ла алма икән. Бер йәшкелтен атайым, гранат был, тип атаны.* К. Кинйәбулатова.

**ГРАНА́Т** [2] [*рус.* 〈 *лат.*] *и.* Ҡара ҡусҡыл ҡыҙыл төҫтәге аҫыл таш. // *Гранат кашлы. Гранат муйынсак.*

**ГРАНА́ТА** [*рус.* 〈 *ит.*] *и.* Шартлай торған артиллерия сиаряды. *Фугаслы граната. Ярсыклы граната.* / Ҡул менән ташлай торған бәләкәй снаряд. *Кул гранатаһы.* ▬ *[Зөбәй Үтәголов] көнбагыш араһына бер-бер артлы гранаталар ташланы.* И. Абдуллин.

**ГРАНДИОЗ** [*рус.* грандиозный 〈 *ит.*] *с. һөйл.* Хайран ҡалырлыҡ ҙур; бөйөк. *Грандиоз план. Грандиоз үҫеш.* ▬ *Шундай грандиоз һугыш барганда, оялмайынса нисек өйҙә ултырып калырга мөмкин.* С. Мифтахов.

**ГРАНИ́Т** [*рус.* 〈 *ит.*] *и.* Кварц, ялан шпаты һәм слюда ҡушымтаһынан торған ҡаты таш. *Кара гранит. Кыҙыл гранит. Гранит менән биҙәү.* // *Гранит баҫкыс. Гранит һын.* ▬ *Гранит .. күктән төшмәй, ул ер ташы. [Уны] был яктарга элгәрерәк Европа территорияһының күп өлөшөн каплап алган боҙлоктар алып килгән.* Д. Бураҡаев.

**ГРА́НКА** [*рус.*] *и.* Типографияла йыйылып, әле биттәргә бүленмәгән набор һәм шул наборҙың ҡағыҙға күсерелгән баҫмаһы. *Гранка укыу.* ▬ *Корректорҙарҙың береһе Сөнәгәтовка укылган гранканы сыгарып бирҙе.* Ғ. Ибраһимов.

**ГРАНОЗА́Н** [*рус.*] *и. а. х.* Сәсеүлек орлоҡтарҙы эшкәртеү, ҡайһы бер ауырыу тыуҙырыусы микробтарҙы ағыулау өсөн ҡулланыла торған препарат. *Орлокто гранозан менән агыулау.*

**ГРА́НУЛА** [*рус.* 〈 *лат.*] *и. махс.* Бер нәмәнең ҡаты бөртөгө.

**ГРАНУЛЛАУ** *ҡ.* Бөртөклө-бөртөклө итеп ваклау. *Тимер рудаһы концентратын грануллау.*

**ГРАНУЛЛЫ** *с.* Бөртөк-бөртөк итеп ваҡланған; бөртөклө. *Гранулла ашлама. Грануллы суперфосфат.*

**ГРАФ** [*рус.* 〈 *нем.*] *и.* Революцияға тиклемге Россияла һәм Көнбайыш Европала: нәҫелдән нәҫелгә күсә торған дворянлыҡ титулы һәм шул титулдағы кеше. *Граф катыны.*

**ГРАФА́** [*рус.* ⟨ *гр.*] *и.* **1.** Төрлө эш ҡағыҙҙары һәм таблицаларҙағы ике вертикаль һыҙыҡ араһындағы бағана йәки ара.

**2.** Текстағы бүлек; рубрика.

**ГРАФАЛАУ** *ҡ.* Графаға бүлеү, графа һыҙыу.

**ГРАФАЛЫ** *с.* Графаға бүлеүле. *Графалы ҡағыҙ.*

**ГРА́ФИК** [1] *и.* **1.** Төрлө эш-күренештең һан күрһәткестәрен бергә бәйләгән һыҙыҡ. *Атмосфера баҫымының үҙгәреү графигы.*

**2.** Эштең күләме һәм үтәлеү ваҡыты күрһәтелгән план. *Поездар йөрөү графигы. Эш графигы.*

**ГРА́ФИК** *и.* Графика (1 мәғ.) өлкәһендә эшләгән художник.

**ГРАФИ́К** *с.* Графика (1 мәғ.) ысулы менән эшләнгән, графикаға мөнәсәбәтле. *График ысул менән башҡарылған һүрәт.*

**ГРА́ФИКА** [*рус.* ⟨ *гр.*] *и.* **1.** Һынлы сәнғәттең ысын донъялағы нәмәләрҙе һәм күренештәрҙе ҡара йәки аҡ төҫтәге төрлө һыҙыҡтар менән төшөрә торған бер төрө һәм шул төргә ҡараған сәнғәт әҫәре. *Графика сәнғәте. Совет графикаһы күргәҙмәһе.*

**2.** *лингв.* Баҫма йәки яҙма хәрефтәрҙең яҙылышы һәм һөйләү теленең шул хәрефтәр менән кәүҙәләнеше. *Ғәрәп графикаһы.* ■ *М. А. Ҡулаев рус-грек графикаһы нигеҙендә башҡорт теленең беренсе милли алфавитын төҙөгән.* Ж. Ғ. Кейекбаев.

**ГРАФИ́Н** [*рус.* ⟨ *ит.*] *и.* Быяланан йәки хрусталдан эшләнгән тар оҙон муйынлы эсемлек һауыты. *Аҡ халатлы апай тиҙ генә Айҙарға графиндан һыу һалып бирҙе лә бүлмәнән сығып китте.* З. Рафиҡов.

**ГРАФИ́Т** [*рус.* ⟨ *нем.*] *и.* Углеродтың бер төрө булған ҡара йәки һорғолт ҡара төҫтәге минерал (электротехник нәмәләр, ҡәләм осо һ. б. нәмә яһау өсөн ҡулланыла); ҡараташ. *Графит ятыштары. Графиттан эшләү.*

**ГРАФО́ЛОГ** [*рус.*] *и.* Графология менән шөғөлләнгән кеше.

**ГРАФОЛОГИК** *с.* Графологияға ҡараған. *Графологик метод.*

**ГРАФОЛО́ГИЯ** [*рус.* ⟨ *гр.*] *и.* Кешенең психика һәм аҡыл һәләтен билдәләү өсөн уның почергын өйрәнеү эше.

**ГРЕ́ЙДЕР** [*рус.* ⟨ *ингл.*] *и.* Канауҙар ҡаҙа һәм ерҙе ҡырып тигеҙләп йөрөй торған машина. *Грейдер менән юл тигеҙләү. Грейдер тағылған трактор.*

**ГРЕЙПФРУ́Т** [*рус.* ⟨ *ингл.*] *и.* **1.** Мәңге йәшел цитрус емеш ағасы.

**2.** Шул ағастың хуш еҫле әскелтемерәк тәмле түңәрәк йәки оҙонсараҡ емеше.

**ГРЕК** [*рус.*] *и.* Грецияның төп халҡын тәшкил иткән милләт һәм шул халыҡтың бер кешеһе. *Грек халҡы. Грек теле. Грек ҡатыны.*

**ГРЕ́ЛКА** [*рус.*] *и.* Эсенә эҫе һыу һалып йәки электр менән тәндең берәй ерен йылыта торған ҡулайлама. *Грелка һалыу.* ■ *«Һә» тигәнсе ҡарсыҡ һыуын ҡайнарлатты, йүгереп грелканы килтереп тә еткерҙе. Уны йөнтәҫ таҫтамалға урап, үҙ ҡулдары менән ҡыҙҙың ҡуҡрәгенә ҡуйҙы.* Ғ. Байбурин.

**ГРИМ** [*рус.* ⟨ *ит.*] *и.* **1.** Роль башҡарыу өсөн эшләнгән яһалма төҫ, ҡиәфәт (буяу, һаҡал-мыйыҡ йәбештереү һ. б.). *Грим бүлмәһе. Грим менән уйнау. Сәхнәгә гримһеҙ сығыу.*

**2.** Яһалма төҫ булдырыу өсөн ҡулланылған төрлө буяу (яһалма мыйыҡ, сәс, һаҡал һ. б.). *Грим һалыу. Грим һөртөү.*

**ГРИМЁР** [*рус.*] *и.* Грим һалыу оҫтаһы, грим һалыусы. *Театрҙа гримёр булып эшләү.*

**ГРИМЛАНЫУ** *ҡ.* Үҙенә-үҙең грим һалыу, буяныу. *Гримланған артист. Гримланыу бүлмәһе.* ■ *Рим Сыртланов гримланып бөткән дә үҙ тирәһенә йыйылған колхозсылар менән һөйләшә.* «Ағиҙел», 1965, № 11.

**ГРИМЛАУ** *ҡ.* Ғрим һалыу. *Актерҙы гримлау.*

**ГРИПП** [*рус.* ⟨ *фр.*] *и.* Тын юлдарын шештереп, сөскөртөп, өшөтөп ауырыта торған вируслы ауырыу. *Грипп менән ауырыу. Грипп йоғоу.*

**ГРИФ** [1] [*рус.* ⟨ *лат.*] *и.* **1.** *ҡар.* **ғанҡа.**

**2.** *ҡар.* **таҙғара.**

**ГРИФ** [2] [*рус.* ⟨ *нем.*] *и.* *муз.* Ҡыллы музыка ҡоралдарының ҡылдарыиа бармаҡ менән баҫҡылап төрлө тауыш сығара торған ағас йәки пластмасса планкаһы.

**ГРИФ** [3] [*рус.* ⟨ *фр.*] *и.* **1.** Ҡултамғаның йәки ҡулъяҙманың һүрәте төшөрөп яһалған мөһөр һәм ошондай мөһөр менән яһалған баҫма, оттиск.

**2.** Китаптың тышына йәки титул битенә яҙыла торған яуаплы ойошманың исеме.

**ГРИ́ФЕЛЬ** [*рус.* ⟨ *нем.*] *и.* Таш таҡтаға яҙа торған таш ҡәләм. *Ул [Шаҡай] бит, хәлле кеше малайы булһа ла, башҡалар дәфтәргә яҙғанда, грифель менән таш таҡтаға яҙып ултыра.* Р. Ғабдрахманов.

♦ **Грифель таҡтаһы** грифель менән яҙыр өсөн ҡараташтан эшләнгән бәләкәй таҡта; таш таҡта.

**ГРИФТАР** [*фарс.*]: **грифтар булыу** ниндәйҙер хәлгә дусар булыу, тотҡон булыу, юлығыу. *[Карттың] Сәфәргәле исемле улы хәҙерге көндә .. Батум исемле ҡалала батша хеҙмәтенә грифтар булып тора икән.* М. Ғафури. *Мөхәббәт бер бәләлер, кем, грифтар булмаған белмәҫ* (Халыҡ йырынан). **Грифтар итеү** ниндәйҙер хәлгә төшөрөү, дусар итеү, юлыҡтырыу, тотҡон итеү. *Бәләгә грифтар итеү.*

**ГРОБ** [*рус.*] *һөйл.* Табут. .. *Сержанттар, офицерҙар алмашлап гроб эргәһендә почетлы ҡарауылда тора.* Ғ. Әмири.

**ГРОССМЕ́ЙСТЕР** [*рус.* ⟨ *нем.*] *и.* Шахмат спортындағы иң юғары оҫталыҡ дәрәжәһе һәм шул дәрәжәне йөрөткән кеше. *Гроссмейстер дәрәжәһе. Гроссмейстер булыу.*

**ГРОТЕ́СК** [*рус.* ⟨ *ит.*] *и.* **1.** Әҙәбиәт һәм сәнғәттә тормош күренештәрен ғәҙәттән тыш арттырып күрһәтеүгә ҡоролған әҙәби алым һәм ошо алым менән ижад ителгән әҫәр. *Гротеск алымы.* ■ *Ғ. Хәйри персонаждарҙы һүрәтләгәндә .. шағир Сәми Хикмәтте .. гротеск аша, карикатура характерында күрһәтә.* С. Сафуанов.

**2.** *типогр.* Бер тигеҙ ҡалынлыҡтағы шрифтың атамаһы.

**ГРУЗИ́Н** *и.* Грузин ССР-ының төп халҡын тәшкил иткән милләт һәм шул милләттең бер кешеһе (иберий-кавказ телдәренең береһендә

һөйләшә). *Грузин халкы. Грузин катыны. Грузин теле.*

**ГРУЗИНСА** *р.* **1.** Грузин телендә. *Грузинса һөйләшеү. Грузинса уҡыу. Грузинса йырлау.*

**2.** Грузин халҡына хас, грузиндар кеүек. *Грузинса бейеү. Грузинса кейенеү.*

**ГРУЗОВИ́К** [*рус.*] *и. һөйл.* Йөк машинаһы.

**ГРУ́ЗЧИК** [*рус.*] *и.* Йөк ташыусы, йөк тейәүсе, йөк бушатыусы. *Волга йырын йырлап грузчиктар тоҡтар күтәрә.* М. Тажи.

**ГРУНТ** [*рус.* ⟨ *нем.*] *и.* **1.** Тупраҡ, ер. / Диңгеҙ, йылға һәм тәбиғи һыу ятҡылыҡтарының төбө. **Грунт һыуы** ер аҫты һыуы.

**2.** Һүрәт төшөрә торған нәмәгә (киндер, ағас һ. б.) беренсе ҡат буялған буяу; ерлек. *Грунт буяуы. Грунт һалыу.*

**ГРУНТЛАУ** *к.* Беренсе ҡатҡа буяу; грунт (2 мәғ.) һалыу. *Грунтлап сығыу.*

**ГРУПО́РГ** [*рус.*] *и.* Группа етәксеһе, группа башлығы (йәмәғәт ойошмаларында).

**ГРУ́ППА** [*рус.* ⟨ *нем.*] *и.* **1.** *кар.* **төркөм** 1—3. *Комсомол группаһы. Бер группала уҡыу.* ■ *Музыка занятиеһынан һуң балалар үҙ группаларына инделәр.* Ә. Ихсан. *Был баҡса эсенә ошо дуҫлыҡтың көсөн сағылдыра торған ниндәйҙер һәйкәл йәки скульптура группаһы ла ҡуйып булыр ине.* К. Мәргән.

**2.** Ниндәйҙер дөйөм сифаттары, үҙенсәлектәре менән берләшкән бер төр. *Углеводтар группаһы.*

**3.** *һөйл.* Ауырыу, зәғифлек арҡаһында хеҙмәткә һәләтлелекте юғалтыуҙы билдәләгән дәрәжә. *Икенсе группа инвалиды.*

◆ **Ҡандың группалары** аҡһым төҙөлөшөнөң төрлөлөгө менән билдәләнгән кеше ҡанының биохимик сифатының үҙенсәлеге. *Уның ҡаны икенсе группа ине. Беренсе һәм өсөнсө ҡан группалары һирәгерәк осрай.*

**ГРУППАЛАУ** *к. кар.* **төркөмләү.**

**ГРУППАЛАШЫУ** *к. кар.* **төркөмләшеү.**

**ГРУППАЛЫ** *с.* Группа, төркөм менән булған; төркөм, группанан торған.

◆ **Группалы никах** бер төркөмдөң һәр ире икенсе төркөмдөң һәр ҡатыны менән йәшәй ала торған никахтың иң боронғо төрө.

**ГРУППАСЫЛЫҠ** *и. кар.* **төркөмсөлөк.**

**ГРУППИРО́ВКА** [*рус.*] *и.* Дөйөм бер маҡсат, теләк, эш менән берләшкән төркөм. *Хәрби группировка.* ■ *Совет Информбюроһы Сталинград районында ҡамалған немец-фашист группировкаһының бөтөрөлөүе тураһында хәбәр итә.* Ә. Ихсан. *Ҡыйралыш фашистарҙың Глухов тирәһенә тупланган „Көньяк" группировкаһының Брянск фронтына һөжүме менән башланды.* Д. Исламов.

**ГРУҺ** [*фарс.*] *и. иҫк.* Төркөм, өйөр. *[Һалдаттарҙың] курсты тамам иткәндәре ауылдарга таралды, яңынан бүтән груһтар өсөн курс башланды.* Ш. Хоҙайбирҙин. *Рәис йыйылыштың ябылыуын иглан иткәс, йыйылган халыҡтар груһ-груһ булып тарала башланы.* М. Ғафури.

◆ **Ҡара груһ** яуыз көс.

**ГРУҺЛАУ** *к. иҫк.* Төркөмләү.

**ГРУ́ША** [*рус.*] *и.* **1.** Йылы яҡта үҫә торған роза сәскәлеләр ғаиләһенә ҡараған алһыу аҡ сәскәле емеш ағасы; армыт.

**2.** Шул ағастың емеше. *Груша вареньеһы.*

**ГРУШО́ВКА** [*рус.*] *и.* Тиҙ өлгөрә торған алма ағас төрө һәм уның алмаһы.

**ГРЯЗЕЛЕЧЁБНИЦА** [*рус.*] *и.* Шифалы ләм менән дауаланыу учреждениеһы, дауаланыу йорто. *Красноусол грязелечебницаһы.*

**ГУА́ШЬ** [*рус.* ⟨ *фр.*] *и.* **1.** Аҡбур, елем ҡатнаштырып һыуға иҙелгән ҡуйы буяу.

**2.** Шул буяу менән төшөрөлгән һүрәт.

**ГУБЕ́РНА** [*рус.* губерния] *и.* Россияға 18 быуат башында индерелгән һәм Советтар Союзында 1924—29 йылдарға тиклем районларға бүленгәнгә ҡәҙәр булған төп административ-территориаль бүленеш берәмеге. *Өфө губернаһы. Владимир губернаһы.* ■ *Самарҙа большевиктарҙың губерна съезы асылды. Юлия па унда ҡатнашты.* Һ. Дәүләтшина. *1708 йылда Петр илде һигеҙ губернаға бүлеүҙе индергән.*

**ГУБЕРНА́ТОР** [*рус.* ⟨ *лат.*] *и.* **1.** Революцияға тиклемге Россияла губерна башлығы. .. *Эшселәрҙең кәтги талабы буйынса митингегә Өфө губернаторы Цехоновецкий килергә мәжбүр була. .. Губернаторҙың приказы буйынса .. полицейскийҙар һәм ҡоралды ғәскәрҙәр демонстрацияны туктата.* М. Ғибадуллин. *Ғәҙебәк Насир яуап биргән саҡта, губернатор майор түҙә алмай* (Халыҡ йырынан).

**2.** АҠШ һәм ҡайһы бер Латын Америкаһы илдәрендәге юғары вазифалы кеше.

**3.** Ҡайһы бер колонияларҙа юғары вазифалы кеше.

**ГУ́БКА** [*рус.*] *и.* Йыуғыс итеп ҡулланылған күҙәнәкле резина нәмә. *Губка менән йыуыныу.* ■ *Керләнгән ягалар, ең остары .. нишатыр спирты иҙелмәһе һеңдерелгән губка йәки сепрәк менән ышҡып таҙартыла.* «Совет Башҡортостаны», 1969, 19 апрель.

**ГУВЕ́РНА́НТКА** [*рус.* ⟨ *фр.*] *и.* Буржуазия һәм дворяндар ғаиләләрендә балаға тәрбиә һәм башланғыс белем биреү өсөн яллап тотолған (ғәҙәттә, сит илдән килгән) ҡатын-ҡыҙ.

**ГУВЕРНЁР** [*рус.* ⟨ *фр.*] *и.* Буржуазия һәм дворяндар ғаиләләрендә балаға тәрбиә һәм башланғыс белем биреү өсөн яллап тотолған (ғәҙәттә, сит илдән килгән) ир кеше.

**ГУГЕНО́Т** [*рус.* ⟨ *фр.*] *и. тар.* Сиркәү һәм хөкүмәт тарафынан эҙәрләнгән 16-18 быуаттарҙағы француз протестанттарының атамаһы.

**ГУДО́К** [*рус.*] *и.* **1.** Сигнал бирә торған механик һыҙғыртҡыс. *Гудок тауышы.* ■ *[Эшсе] гудокты ҡыскыртыу өсөн пар ебәрҙе. Гудок көслө тауыш менән бик ҡаты ҡыскырырга тотондо.* Ш. Шәһәр. *Күрәм: эшкә тора республикам, һөрән һалды бына гудоктар.* Ғ. Сәләм.

**2.** Механик һыҙғыртҡыс ярҙамында бирелгән тауыш; сигнал. *Гудок биреү.* ■ *Пароход оҙон ғына гудок бирҙе лә, мороно менән аҡ тулҡындарҙы яра-яра йөрөшөн шәбәйтте.* М. Тажи. *Сменага гудок булды, яңғырап китте ялан.* Т. Арслан.

**ГУДРО́Н** [*рус.* ⟨ *фр.*] *и.* Нефть ҡыуғандан һуң ҡала торған ыҫмала һымаҡ ҡуйы ҡара матдә (юл төҙөү, түбә ябыуына ҡойоу өсөн ҡулланыла). *Нефттән бензин, .. кәрәсин һәм төрлө майҙар*

*алалар, ә калдыҡтарынан мазут һәм гудрон яһайҙар.* Ә. Вәли.

**ГУДРОНЛАУ** *ҡ.* **1.** Гудрон буяу, гудрон һеңдереү. *Бүрәнәне гудронлау. Юлды гудронлау.*

**2.** Ғудрон йәйеү (юл төҙөгәндә).

**ГУЛЯ́ТЬ** [*рус.*]: **гулять итеү** *һөйл.* уйнап-көлөп күңел асыу; типтереү. *Байтаҡ [ситтә йәшәгән] егеттәр йәкшәмбе һайын ҡайтып гулять итәләр икән.* С. Агиш.

**ГУЛЯ́Ш** [*рус.* ⟨ *вен.*] *и.* Итте турап, төрлө тәмләткес ҡушып бы́ҡтырып әҙерләнгән ашамлыҡ.

**ГУМАНИ́ЗМ** [*рус.* ⟨ *лат.*] *и.* **1.** Яңырыу дәүерендә барлыҡҡа килеп, кеше шәхесен ирекле итеү, феодализм һәм католицизм ҡоллоғонан ҡотолтоу принциптарын алға һөргән прогрессив хәрәкәт.

**2.** Кешеләргә һәм уның эшенә хөрмәт менән ҡараған, кешене яратыу тойғоһо менән һуғарылған мөнәсәбәт, кеше һөйөүсәнлек; кешелеклек.

**ГУМАНИ́СТ** [*рус.*] *и.* **1.** Гуманизм (1 мәғ.) яҡлы кеше.

**2.** Гуманизм (2 мәғ.) рухы менән һуғарылған кеше. *Гуманист булыу.*

**ГУМАНИСТИК** [*рус.*] *с.* Гуманизмды яҡлаған; гуманизмға хас. *Гуманистик ҡараш. Гуманистик маҡсат.* ■ *Социалистик реализм әҙәбиәте — үҙенең бөтә тәбиғәте менән гуманистик әҙәбиәт. Ул бөтә донъя хеҙмәтсәндәренең яҡты киләсәге булған коммунизмды төҙөү өсөн һуғышсан көрәш алып бара.* К. Әхмәтйәнов.

**ГУМАНИТАР** [*рус.* гуманитарный] *с.* Кешелек йәмғиәтен һәм уның культураһын өйрәнә торған. *Гуманитар фәндәр: тарих, философия, филология* һ. б.

**ГУМАНЛЫ** *с. ҡар.* **кешелекле.** .. *Хәҙер [Россия] донъя хеҙмәтсәндәренең күңеле тартылған, өмөттәре бағланған ҡибла хеҙмәтен үтәй икән — быны менән беҙ коммунистар партияһының аҡылына, гуманлы политикаһына бурыслыбыҙ.* Х. Ғиләжев.

**ГУМАНЛЫЛЫҠ** *и. ҡар.* **кешелеклек.**

**ГУМУС** [*рус.* ⟨ *лат.*] *и. ҡар.* **серемтә.** *Тупраҡтың гумус ҡатламы.* ■ *Тупраҡтың структураһын һаҡлауҙа һәм уның гумус менән байытылыуында органик ашламаның роле бигерәк тә ҙур.* «Совет Башҡортостаны», 1986, 28 ғинуар.

**ГУНН** *и. ҡар.* **һун.**

**ГУРТ** [*рус.* ⟨ *пол.*] *и. ҡар.* **көтөү** [3].

**ГУСА́Р** [*рус.* ⟨ *венгр.*] *и.* Батша армияһы һәм ҡайһы бер сит ил ғәскәрҙәрендәге: еңел кавалерия һалдаты. *Гусарҙар полкы.* ■ *Мин гусарҙарҙың гел бер төҫ һары аттарына ҡарап барыуым менән унда офицер барын оноторганмын.* А. Таһиров.

**ГУТАЛИ́Н** [*рус.*] *и.* Күн аяҡ кейемдәрен таҙарта торған май; итек майы.

**ГУТТАПЕ́РЧА** [*рус.*] *и.* Ҡайһы бер үҫемлектәрҙең ҡатҡан һутынан алына торған каучук һымаҡ һығылмалы матдә (медицинала һәм техникала ҡулланыла).

**ГУЦУ́Л** [*рус.*] *и.* Көнбайыш украиндарҙың этник бер төркөмө һәм шул төркөмгә ҡараған кеше. *Гуцул ҡатыны. Гуцул бейеүе. Гуцул кейеме.*

**ГҮЖӘ** *и. иҫк.* Күзә. *Ҡатыҡһыҙ ҡара гүжә — эскән ашы. Эскәндә тамсылайҙыр күҙҙең йәше.* Аҡмулла.

**ГҮЗӘЛ** *с.* **1.** Бик матур; сибәр, һылыу. *Гүзәл булыу. Гүзәл итеү.* // *Гүзәлде яратыу.* ■ *Таң да гүзәл, һандуғас та, һин дә матур.* С. Кулибай. *Шул гүзәлде уйлай-уйлай иҫтән тайып, нисә көндәр ашамай-эсмәй йөрөгән саҡтар!* Ш. Бабич. / Шәп, яҡшы, һәйбәт. *Гүзәл йырҙар. Гүзәл кеше.* ■ *Илем — йәшәү кеүек гүзәл, йәшәү гүзәл илем шикелле.* Р. Ниғмәти.

**2.** *и. мәғ. эйл. ф.* гүзәлем Ҡатын-ҡыҙға яратып әйтелә. *Ҡытат күлдәк кейеп, ҡыя баҫып йөрөй микән минең гүзәлем* (Халыҡ йырынан).

**3.** *(баш хәреф менән)* Ҡатын-ҡыҙ исеме.

◆ **Башҡорт** гүзәле Башҡортостан шарттарына яраҡлаштырып сығарылған алма сорты.

**ГҮЗӘЛЛЕК** *и.* Матурлыҡ, йәмлелек. *Сихри гүзәллек. Тирә-яҡтың гүзәллеге. Гүзәллегенә һоҡланыу.* ■ *Әй тыуған ер, тыуған ер, гүзәллеккә тулған ер!* Ҡ. Даян. *Үткән көндәр гүзәллеген уйлап, янма йөрәк, янма, һағынма.* Н. Нәжми. / Яҡшылыҡ, камиллек, һәйбәт булыу сифаты. .. *Хикәйәте лә һине ирекһеҙҙән тәрән уйландыра, йәшәүҙең матурлығы, кеше рухының гүзәллеге, яманлыҡ, яҡшылыҡ .. хаҡында уй йөрөтөргә мәжбүр итә.* З. Биишева.

**ГҮЗӘЛЛӘНДЕРЕҮ** *ҡ.* Гүзәлгә әйләндереү, гүзәл итеү; матурлау.

**ГҮЗӘЛЛӘНЕҮ** *ҡ. ҡайт. ҡар.* **гүзәлләү.**

**ГҮЗӘЛЛӘҮ** *ҡ.* Гүзәл итеү; матурлау.

**ГҮЙӘ** [*фарс.*] *т. кит.* Бер нәмәне йәки хәлде икенсеһенә сағыштырғанда, оҡшатҡанда ҡулланылып, әйтерһең дә, кеүек, шикелле тигән мәғәнә бирә. *Бик алыҫтан улар күренделәр, гүйә күкрәк киргән батырҙар.* Д. Юлтый. *Гүйә әле миңә ун һигеҙ йәш — һыу кисмәгән, утта көймәгән.* М. Кәрим.

**ГҮЙӘКИ** [*фарс.*] *т. ҡар.* **гүйә.** *[Юлдыҡай:] Эйе, Ынйыҡай, был һүҙеңде ишеткәндә, гүйәки ярлылығым онотола. Әллә ниндәй ҙур өмөт, ҙур көстәр тышҡа сығырға ынтыла!* Х. Ғәбитов. *Һүҙең үтмәҫ урындарҙа әмер итмәк — гүйәки бағананы ташҡа ҡаҡмаҡ.* М. Ғафури.

**ГҮР** [*фарс.*] *и.* Үлгән кешене ҡуйыр өсөн ергә ҡаҙып эшләнгән урын; ҡәбер.— *Әй киленкәйем, әйттем дә бөттөм, минең бер аяғым ерҙә, икенсеһе гүрҙә,— тине әбей.* М. Тажи. *Ҡара ерҙә — яҡты көнөм, ҡара ерҙә — ҡара гүрем, .. Күлдәгем ул — алтын ерем, һалҡын ерем, ялҡын ерем.* Н. Нәжми.

◆ **Гүр алыу** *йәки* **гүргә инеү** үлеү. *Ил ташлаған ир булһа, көнө етмәй гүр алыр* (Ҡобайырҙан). **Гүр ғазабы** дин буйынса, донъялыҡтағы гөнаһ өсөн гүрҙә бирелгән яза. **Гүр хәйере** дин йолаһы буйынса, мәйетте ерләгәндә муллаға (йәки мәзингә) бирелә торған хәйер (ғәҙәттә аяҡлы мал бирелә). *[Әминә — Айнурға:] Кәзәм, уның ике бәрәсе бар. .. Иллә мәгәр кәзәмде тотонмайым. Гүр хәйеренә аяҡлы мал кәрәк.* Н. Мусин. **Гүр эйәһе булыу** үлеү, гүргә инеү. *[Фәрүк:] Атайыбыҙ март аҙағында беҙҙән айырылып, гүр эйәһе булды.* С. Агиш.

● *Бирәсәгең бирмәй гүргә инеп булмай.* Әйтем. *Ирҙән иргә йөрөү — гүрҙән гүргә йөрөү*

менән бер. Әйтем. *Көтөү ташлаған малды бүре алыр, ил ташлаған ирҙе гүр алыр.* Әйтем. *Юл аҙабы — гүр ғазабы.* Әйтем.

**ГҮРСТАН** [*фарс.*] *и. шигр.* Ҡәберлек, зыярат. *Беҙ бер төрлө халыҡ булдыҡ үлмәгәндәй, гүрстанға яңғыҙ баш бармағандай.* Аҡмулла.

**ГҮСЛӘ** [*рус.* гусли] *и.* Сиртеп уйнай торған күп ҡыллы боронғо рус музыка ҡоралы. *Гүсләлә уйнау.*

**ГӘЗИТ** [*рус.* газета] *и. һөйл.* Газета. *[Гөлбәзирә:] Ташлаһаңсы, улым, шул гәзитеңде. Сәй эскәндә кеше гәзит уҡыймы?* Р. Ниғмәти.

**ГӘЙНӘ** *и.* Бер башҡорт ырыуының исеме.

**ГӘЛСӘР** *и.* Үтә нык сағылып ялтыраған юғары сифатлы быяла төрө; бәлләүер. *Гәлсәр һымаҡ. // Гәлсәр һауыт. Гәлсәр ваза.* ■ *Гәлсәр сыңын сығарған моң әллә таң ысыҒы тамған иртәме?* Р. Ғарипов.

◆ **Гәлсәр таш** оптикала һәм ювилер изделиелар яһауҙа ҡулланылған ҡырлы-ҡырлы кристаллы кварцтың үтә күренмәле бер төрө; бәлләүер таш. **Тау гәлсәре** *ҡар.* **гәлсәр таш.** *[Коллекцияла] төрлө файҙалы ҡаҙылмаларҙың минералдары: магнит рудаһы, баҡырлы колчедан, гәжәп матур тау гәлсәре .. һ. б. бар.* «Ағиҙел», 1969, № 4.

**ГӘП** [*фарс.*] *и.* Үҙ-ара һөйләшкән һүҙ, әңгәмә.

◆ **Гәп һатыу** (*йәки* **һуғыу**) бирелеп китеп хәбәр һөйләшеү; ләстит һатыу. *Гәп һатып ултырған ҡыҙҙар бригадир күренеү менән шып туктаны.* И. Әхтәмйәнов. *Ситән буйы бүрәнәлә ауылдаштар йыйылып гәп һуға.* Т. Йәнәби.

**ГӘПЛӘШЕҮ** *ҡ.* Әңгәмәләшеү, һөйләшеү. *Донъя хәлдәре тураһында гәпләшеү. Гәпләшеп ултырыу.* ■ *Махъян бабай менән көн дә шулай гәпләшә торғас, ул миңә, мин уға эйәләшеп, дуҫлашып киттек.* С. Кулибай.

**ГӘР** *терк. иҫк.* Әгәр. *Бер йозаф һүҙ булһа ла гәр, бер изаһыҙ үтмәйек.* Ш. Бабич.

**ГӘРБИЛ** [рус. горбыль] *и. һөйл.* Бер яғы йомро таҡта. *Бригадирға киләм, ҡыйыҡты бөтәштерергә анауы гәрбилдәреңде бир әле, тим. Юҡ, әй, яҡын да ебәрмәй, шул сүпте лә йәлләй.* Ә. Гәрәев.

**ГӘРЕЗ** [*рус.* гарус ⟨ *пол.*] *и.* **1.** Сиратылған нәҙек йөн төрө. *Ҡыҙыл гәрез менән сигеү.* ■ *[Ишбулдин] тирле елкәһен төрлө гәрез менән сиккән кизеле ҡыҙыл башлы таҫтамалға һөртә-һөртә урынынан ҡуҙғалды.* Ә. Вәли. *Ҡыҙыл сатин күлдәгемде гәрез менән ҡайытам.* С. Ҡудаш.

2. Йөн туҡымаға оҡшаған мамыҡ тауар.

3. *диал.* Сигеү ебе; кизе.

**ГӘРНИС** [*рус.* гарнец ⟨ *пол.*] *и. һөйл.* Тирмән, сипарат кеүек нәмәнең файҙаһын күргән өсөн хужаһына бирелә торған өлөш; түләү. *Гәрнис алыу. Гәрнис биреү.* ■ *Бына мин .. иҫке тирмәндә төҙәттем. Күпме генә гәрнис алам. Ул да үҙемә эләкмәй.* Ә. Чаныш. *[Фаҡиһа бисәләргә:] Һеҙҙә һөтөгөҙҙө килеп тартығыҙ. Гәрнисе әллә ни тормаҫ,— тип яуап ҡайтарҙы.* Ж. Кейекбаев.

**ГӘРСӘ** [*фарс.*] *терк. кит.* Ҡушма һөйләмдәрҙә баш һөйләмде эйәрсен һөйләмгә теркәү өсөн ҡулланыла. *Гәрсә был бишмәттен эсе-тышы бергә һырылып, ҡул менән генә тегелгән булһа ла, миңә сикһеҙ матур булып күренде.* М. Ғафури. *Гәрсә һөймәүеңә ышанмайым, ишетмәгәс уны үҙеңдән.* А. Игебаев.

**ГӘРӘ** *и.* Бер башҡорт ырыуының исеме. *Ил гәрә. Урман гәрә.*

**ГӘРӘБӘ** [*гәр.*] *и.* Ылыҫлы ағастарҙың сайыры күп быуаттар билдәле бер шарттарҙа ятыуҙан барлыҡҡа килгән һары төҫтәге үтә күренмәле матдә (аҫыл таш итеп ҡулланыла). *// Гәрәбә алҡа. Гәрәбә муйынсаҡ. Гәрәбә ҡашлы йөҙөк.* ■ *Йыйын сүп-сар менән бергә диңгеҙ үҙенең төбөндәге ысын гәрәбә бөртөктәрен дә ярға сығарып ырғыта.* М. Кәрим. *Комбайн агрегаты баҫыу буйлап килә. Бункерға гәрәбә кеүек саф иген аға.* Ә. Вәли. *Бойҙай үҫә, ҡул ҡамышы тулҡынып торған һымаҡ; башаҡтарын бөртөк-бөртөк гәрәбә һырыған һымаҡ.* М. Кәрим.

**ГӘРӘБӘЛӘЙ** *с.* Тос, эре, таҙа (игенгә ҡарата). *Артель кешеләре .. көҙгә кергәс, бура тултырып, гәрәбәләй бойҙай алдылар.* Б. Бикбай. *Ауыл осонда ҡатын-ҡыҙ, ир-ат шаулашып бойҙай елгәрә. Орлоғо орлоҡ ҡынамы. Гәрбәләй тәгәрәшеп ята.* Р. Низамов.

**ГӘҮҘӘ** *и. диал.* Кәүҙә.

**ГӘҮЕР** *и. ҡар.* **кафыр.** *[Маҡтым иренә:] Тубы ҡашмау кеймәҫ наҙ инем дә сүрәкәңде кейҙерҙең дә, гәүер.* Д. Юлтый.

**ГӘҮҺӘР** [*фарс.*] *и.* **1.** Ҡайһы бер диңгеҙ ҡабырсағынан алына торған аҡ, алһыу, һарғылт төҫтәге ашлыҡ бөртөгө һымаҡ ҡиммәтле матдә; ынйы. *// Гәүһәр ҡашлы алтын йөҙөктәр кеймәнең һин эшсе ҡулыңа.* М. Сөндөклө. *Наҙлыһылыу бигерәк һылыу икән, ил өҫтөндә гәүһәр таш кеүек.* Й. Солтанов.

**2.** *күсм.* Ижад әҫәрҙәре һ. б. нәмәләрҙең биҙәге булырлыҡ иң яҡшы, һәйбәт үрнәктәре. *Халыҡ ижады гәүһәрҙәре.* ■ *Күпте күргән илдең аҡһаҡалдары күпте белгән саф гәүһәр аҡылдары!* М. Кәрим.

**3.** *(баш хәреф менән)* Ҡатын-ҡыҙ исеме.

**ГӘҮҺӘР-ЯҠУТ** *и. йыйн.* Гәүһәр, яҡут һ. б. аҫыл таштар. *Был ҡала халҡы күнәк-күнәк алтын-көмөш, гәүһәр-яҡут бүләк итеп, Аҡъял батырҙы ер өҫтөнә сыға торған тишек ауыҙына саҡлы оҙатып ҡуйған, ти* (Әкиәттән).

# Ғ

**Ғ** [ғы] Башҡорт алфавитының бишенсе хәрефе.

**ҒАБДИӘТ** *[ғәр.] и. иҫк.* Ҡоллоҡ, табыныусылыҡ. .. *Бөтә ғәскәр тиҙ ҡуҙғалды, барып еттек беҙ йәһәттән, ҡотолоу кәрәк ғабдиәттән.* Б. Мирзанов.

**ҒАБИД** [*ғәр.*] *и. иҫк.* Ҡоллоҡ итеүсе, табыныусы, ғибәҙәт ҡылыусы; динле. *[Ғәлим] көндөҙҙәрҙә ураҙа тотоп, төндәрҙә уяғ торған ғабид кеүек төнөн көнгә әүерелдереп эшләне.* Ф. Туйкин.

**ҒАДИ** [*ғәр.*] *с. кит.* Ябай. *Ғади кеше. Ғади ҡыланыу.* ■ *Мин ғади, мин иң түбән тормош төбөнән бер бала.* Д. Юлтый. *Ғади ҡараш менән күреп булмай ни ятҡанын диңгеҙ төбөндә.* Ғ. Хәйри.

**ҒАДӘЛӘТ** [*ғәр.*] *и. кар.* **ғәҙәләт.** *Етәкләрһең сәгәдәткә, бәхеткә, якты көндәргә, гадәләткә, мөхәббәткә, кәрендәшлеккә..* Б. Мирзанов.

**ҒАДӘҮӘТ** [*ғәр.*] *и.* Дошманлыҡ, күрә алмаусылыҡ. *Ғадәүәт, көнсөллөк тамырын сабыр, коротор.* Б. Мирзанов.

**ҒАҘӘБ** [*ғәр.*] *и. иҫк.* Татлы, тәмле, сөсө телле. *Аның мәдехендә бән газәб казакса бер бәйет яҙып тараттым..* Аҡмулла.

**ҒАЖИБ** [*ғәр.*] *с. иҫк. кит.* Аптырата торған, ғәжәпләндергән. *Әй, Нәжип, дәрүиш Нәжип, хәлфүш Нәжип .. беҙгә биргел бик гажиб һәм бик назик мәнзүм Нәжип.* Ш. Бабич.

**ҒАЖИЗ** [*ғәр.*] *с. кит.* **1.** Бер ни эшләй алмай торған; мәхрүм, көсһеҙ. *Мин дә гажиз кәләм һәм кагыҙҙан, куҙем күрмәй яҙыу һыҙырға.* Б. Вәлит.

**2.** Аптыранған, ни эшләргә белмәгән; сараһыҙ, хәлһеҙ. *Тоткондагы гажиз, ауыр хәлдәремде һәр береһен назым кылып яҙам имде* (Бәйеттән).

□ **Ғажиз булыу** 1) мәхрүм булыу; бер ни эшләй алмау; 2) аптыраныу, ни эшләргә белмәү, сараһыҙ булыу. *Иҫкә алдык гажиз булган бик күп асты, кейемдән мәхрум булган ялангасты.* М. Ғафури. *[Бабсактар] бер Ҡаракөлөмбәтте таба алмай гажиз булдылар.* «Бабсаҡ менән Күсәк». **Ғажиз итеү** 1) мәхрүм итеү; 2) сараһыҙ, хәлһеҙ итеү.

**ҒАЖИЗАНӘ** [*ғәр.*] *р. иҫк. кит.* **1.** Хәлһеҙлек, көсһеҙлек менән.

**2.** Түбәнселек менән. *Ошо комедияны .. бәлки үйнарга ярамаһа ла, үрнәк булырга ярар өмөтө илә гажизанә тәржемә итергә жөрьәт кылдым.* М. Фәйзи.

**ҒАЖИЗЛАНЫУ** *к. иҫк. кит.* Көсһеҙләнеү, хәлһеҙләнеү, сараһыҙ булыу. *Атайҙар тупрак ашап гажизлангас, беҙ, бисара, калдык был көн ас-ялангас* (Бәйеттән).

**ҒАЗАЗИЛ** [*ғәр.*] *и. иҫк.* **1.** Иблис, шайтан. *Нишләп улай газазилдар канлы хәнйәр кайрайҙар? Нишләп улай кан койорга яуызлыктар эҙләйҙәр!* Ғ. Хәйри.

**2.** *миф.* Йәннәттән ҡыуылған бер фәрештәиең исеме. *Инде уны мәңгегә Иблис, тиҙәр, Ғазазил тип өндәшергә кушмайҙар.* Ш. Бабич.

**ҒАЗАМАТ** *и. иҫк.* Аҙамат. *Тулган ай ҙа бер газамат алдында сәждә иткән кеүек ергә карап урынында кузгалмай тора.* М. Ғафури.

**ҒАЗАП** [*ғәр.*] *и.* **1.** Кешене физик яҡтан ныҡ интектергән, ыҙалатҡан тормоштағы ниндәйҙер ауырлыҡ; яфа, ыҙа. *Юл газабы. Мең газап менән.* ■ *Ҡара төндә, кызыл кан эсендә [селькор] газап менән төндө үткәрҙе.* Ғ. Мәсғүд. *Салауаттың күргән газаптары ерҙән ашып, күккә олгашты* (Халыҡ йырынан).

**2.** Ныҡ уйланырға мәжбүр иткән, рухи яҡтан интектергән ауыр эске кисерештәр. *Выждан газабы. Ижади газап. Ғишык газабы.* ■ *Зил-зәбәр үйҙар, газаптар менән тик һыҙлай был баш.* Ш. Бабич.

□ **Ғазап сигеү** ғазапланыу, ыҙаланыу, интегеү. *Төнгө буран .. Төн капкаһын кага бер бала. Ата-әсәһеҙ калган ул бер етем шулай газап сигә доньяла.* Ғ. Амантай.

◆ **Тамуҡ ғазабы** үтә ныҡ интектергән, ыҙалатҡан ауыр хәл. *Һугыш хәлен һорашмагыҙ — бары ла тамук газабы* (Бәйеттән).

**ҒАЗАПЛАНЫУ** *к.* 1. Яфаланыу, интегеү, тән ғазабы кисереү. *Ас-ялангас газапланган, йөҙәгән һәм йәберләнгән халык баш күтәрә.* Һ. Дәүләтшина.

**2.** Ауыр эске кисереш менән интегеү, яфаланыу, йән ғазабы кисереү. *Сәгиҙә .. һүҙ әйтә алмай калыуына борсолдо. Уның күңеле газапланды, выжданы яфаланды.* М. Тажи.

**ҒАЗАПЛАУ** *к.* **1.** Яфалау, ыҙалатыу, физик яҡтан интектереү. *[Йәмилә — Ҡаракөлөмбәткә:] Үлтерә торган булһаң, тиҙерәк үлтер, әммә мине былай газаплама. Мин йөклө түгел.* «Бабсаҡ менән Күсәк».

**2.** Ауыр эске кисерештәргә дусар итеү, интектереү. *Мин эҙләнем һине .. табырмын тип, .. әллә табып, кабат югалттым .. [ә һин] тик газаплап мине йөрөткәнһең ...* Н. Нәжми.

**ҒАЗАПЛЫ** *с.* Ауыр кисерешле; яфалы. *Ғазаплы уйҙар. Ғазаплы юл.* ■ *М. Өмөтбаев, билдәле, башкорт халкының газаплы тормошо менән килешә алмай.* З. Шәрҡи.

**ҒАЗИ** [*ғәр.*] *и иҫк.* **1.** Һуғышта еңеүсе. *Шәһадәт нуры илан мөнәүүәр үлган газиҙар.* М. Өмөтбаев.

**2.** (*баш хәреф менән*) Ир-ат исеме.

**ҒАЗИЛЛАШЫУ** *к. диал.* Телләшеү.

**ҒАЗИМ** [*ғәр.*] *с. иҫк. кит.* **1.** Ниәт иткән, тәүәкәлләгән, ҡарар иткән (кешегә ҡарата).

**2.** (*баш хәреф менән*) Ир-ат исеме.

**ҒАЗРАИЛ** [*ғәр.*] *и.* Дини ҡараш буйынса, кеше үлгәндә йәнен ала торған зат. *Ул [Кәрим] фронтта булган .. Деникинды кыуып йөрөгән. Уны газраил үҙе килһә лә куркыта алмаҫ ..* Ш. Шәһәр. *Ер йөҙөндә .. күп ил мир көтә, газраилдан туйган инде — һәр кеше ябраил көтә.* Ш. Бабич. / *һөйл.* Яуыз, усал кеше. *Вьетнам ерен, гәрәп ерҙәрен газраилдар уҙҙы, тапаны.* К. Кинйәбулатова.

● *Бай бар ерҙә, малым бар, тимә, газраил бар ерҙә, йәнем бар, тимә.* Мәҡәл.

**ҒАЗЫБ** [*ғәр.*] *и. иҫк.* Асыу, яуызлыҡ, нәфрәт.

□ **Ғазыб итеү** асыуландырыу. *Һиммәтем зекер булһын йә раббым, газыб итмә, зекереңде онотторма, харамдан һакла.* М. Өмөтбаев. **Ғазыбына тейеү** асыуландырыу.

**ҒАЗЫПЛАНЫУ** *к. иҫк.* Асыуланыу. *Ғазыпланып килеп йәбеште.* ■ *Ул [Айбулат] бик газыпланып тешен кысты.* Һ. Дәүләтшина.

**ҒАИД** [*ғәр.*] *бәйл. иҫк.* (*төбәү клш менән*) Нимәгәлер бәйләнешле, мөнәсәбәтле. *Башкорт халкының уҙган тарихына гаид материалдарҙы караһаң, халыктың элекке замандан бирле .. хаким булып торган хөкүмәтенән риза булмай, .. уның менән ылгый һугышып гүмер үткәргәнен күрәбеҙ.* Ш. Хоҙайбирҙин.

**ҒАИЛӘ** [*ғәр.*] *и.* **1.** Ир, ҡатын, бала-саға һәм башҡа яҡын туғандарҙан торған кешеләр төркөмө. *Ғаилә башлыгы. Ғаилә тормошо. Ғаилә короу.* ■ *Ғаилә дәүләт тарафынан яклана. Никах катын менән ирҙең ирекле ризалыгына нигеҙләнә: ир һәм катын гаилә мөнәсәбәттәрендә*

*тулыһынса тиң хоҡуҡлы.* Башҡорт АССР-ының Конституцияһы, 1984.

**2.** *күсм.* Бер төрлө эшмәкәрлек, мәнфәғәт менән йәшәгән кешеләр төркөмө. *Бер ғаилә булып йәшәү.* ■ *Совет космонавтарының ғаиләһе — һәйбәт, дуҫ ғаилә.* «Совет Башҡортостаны», 1964, 23 ғинуар.

**3.** Сығышы һәм төҙөлөшө менән яҡын булған хайуан һәм үҫемлектәрҙең бер нисә төркөмөнән торған нәҫел берәмеге. *Ирен сәскәләләр ғаиләһе. Бесәй һымаҡтар ғаиләһе.*

● *Балаһыҙ ғаилә — емешһеҙ ағас.* Әйтем.

**ҒАИЛӘЛЕ** *с.* Ғаиләһе (1 мәғ.) булған, ғаиләһе бар, яңғыҙ булмаған. *Ғаиләле кеше. Ғаиләле булыу.*

**ҒАИЛӘҮИ** *с.* Ғаиләгә ҡараған, ғаиләгә мөнәсәбәтле. *[Илдар:] Үҙ фатирың үҙеңә күрә һинең ғаиләүи дәүләтең бит ул!* Д. Исламов.

**ҒАЙН** [*ғәр.*] *а. иҫк. кит.* Үҙе, нәҡ үҙе. *Ғауам халҡы баштарын беҙ ҡаңғырттыҡ, вөжүдебеҙ ғайн бер афәт булды.* Аҡмулла.

**ҒАҠАИД** [*ғәр.*] *и. иҫк.* **1.** Ышаныс, иман. *Замана ҡыҙҙарына һин күҙең һал! Иман ислам ғаҡаидыңды белеп ал.* С. Яҡшығолов.

**2.** Дини дәреслек исеме. *Хәйрулла хәҙрәт .. ғаҡаид дәресен бирә ине.* М. Ғафури.

**ҒАҠРАП** *и. кар.* **ғәҡрәп.**

**ҒАҠЫЛ** *и. иҫк. кит.* Аҡыл. *Икенсе ҡиммәт нәмә ғаҡыл тигән, ғаҡылһыҙға тәүфиҡ яғы таҡыр тигән.* Аҡмулла.

**ҒАҠЫТ** [*ғәр.*] *и. иҫк.* Никах. *Ғаҡыты бар.* ■ *[Зөлхиә — Әҙһәмгә:] «Бар, мулланы алып кил. Мине үҙең ғаҡыт ҡылдыр»,— ти. Теге мулланы алып килә лә, никах уҡыта* (Әкиәттән).

**ҒАЛИ** [*ғәр.*] *с. кит.* Оло, бөйөк, ҙур. *Ғали тойғолар. Ғали өмөттәр.* ■ *Йәшәү — ул сәнғәт, уның да иң нескәһе, иң ғалиe.* Ғ. Әмири. *Мәхрүм ул тышҡы биҙәктән, һәр йыры бик-бик ғади, әммә рухы бик ғали.* Д. Юлтый.

◆ **Ғали зат** юғары ҡатлам кешеһе; аҡһөйәк. *Эшсе! Залимдарҙы һеперен түгәйек, береһе ҡалмаһын! Яуыз йәндәр һәм дә ғали заттар беҙҙең юлға кәртә һалмаһын, берлектә көс!* Ғ. Хәйри. **Ғали йән** кешелек сифаттары юғары, башҡаларҙан өҫтөн, бөйөк кеше. *Йәшәй кеше — ғорур батыр кеше. Йәшәү өсөн һатмай, һатылмай. .. Мин табынам шундай ғали йәнгә.* З. Биишева. **Ғали йәнәп** *кар.* **йәнәп. Ғали мәктәп** *иҫк.* юғары уҡыу йорто. *Хәҙер ул [Амантай] әҙәбиәт ғали мәктәбендә уҡый.* Д. Юлтый.

**ҒАЛИБАНӘ** [*ғәр.* + *фарс.*] *р. иҫк.* Батырҙарса, еңеүселәрсә; еңеүсе булып.

**ҒАЛИМ** [*ғәр.*] *и.* Фән өлкәһендә эшләгән уҡымышлы кеше; белем эйәһе. *Ҙур ғалим. Совет ғалимдары. Ғалим булыу.* ■ *Ж. Кейекбаев күп яҡлы, универсаль белемле ғалим, ысынлап та үтә һирәк осрай торған талант ине.* Ғ. Әмири. *Ғалимдар һун кәбиләләрен боронғо төрки телендә һөйләшеүсе халыҡ булған тип баралар.* Н. Мәжитов.

● *Боландың мөгөҙө, ғалимдың һүҙе, филдең теше, оҫтаның эше ҡиммәт.* Әйтем.

**ҒАЛИМ-ҒӨЛӘМӘ** [*ғәр.*] *и. йыйн.* Ғилем эйәләре, ғалимдар. *[Биби карсыҡ:] Сабыр иткән моралына еткән, ашығыу шайтан эше,.. тип әйткән ғалим-ғөләмәләр.* М. Ғафури.

**ҒАЛИМЛЫҠ** *и.* Ғалим булыу. *Ғалимлыҡ дәрәжәһенә олғашыу.*

**ҒАЛИП** [*ғәр.*] *и. иҫк.* **1.** Еңеүсе, көрәштә еңеп өҫтөнлөк алыусы. *Ғалип булыу.* ■ *Беҙҙең фоҡара ул түҙемле, .. быға тиклем ҡанлы походтарҙа ғалип булып үткән кеүек, был походта ла ғалип булып үҙен күрһәтәсәк.* Ш. Хоҙайбирҙин. *Ҡан аралаш ағалыр күҙҙән йәшем, япон дошман беҙгә ғалип булды инде* (Бәйеттән).

**2.** *(баш хәреф менән)* Ир-ат исеме.

**ҒАЛЫЙ: ғалый тороу** *диал.* ләл-ләл (1 мәғ.) тороу.

**ҒАЛӘМ** [*ғәр.*] *и.* **1.** Бөтә ер һәм күк йөҙө; йыһан. *Ғаләмде өйрәнеү.* ■ *Ғаләм шул хәтле ҙур, хатта иң ябай иҫәп буйынса ғына Галактикала Ергә оҡшаш 100 000 планета бар.* «Совет Башҡортостаны», 1966, 27 февраль.

**2.** *кар.* **донъя** 2. *Таң йылмайҙы миңә шул минутта, шатлыҡ биреп барлыҡ ғаләмгә.* С. Ҡудаш. *Дәүләт илә тулды ғаләм, зиннәт илә ер йөҙө.* Ғ. Соҡорой. *Булған илдең батыр улдары. Баш етмәҫлек эштәр эшләгәндәр, бөтә ғаләм белгән улар ҙы.* Салауат Юлаев.

**ҒАЛӘТ** [*ғәр.*] *и. иҫк.* Хата, яңылышлыҡ. *Өмөт яҡты, тип, алда .. Күңелем йыуандырҙым .. түҙҙем эстә тулған сиргә, ғаләткә.* Б. Мирзанов.

**ҒАМ** [*ғәр.*] *и. кар.* **ғауам.** *Ҡайһыһы [кешеләрҙең] хайуан көйө ғам ҡашында шәп була..* Ш. Бабич.

**ҒАМИЛ** [*ғәр.*] *и. иҫк.* **1.** Эшсе, хеҙмәт эйәһе, хеҙмәткәр.

**2.** Хәрәкәткә килтергән көс, төп фекер, сәбәп. *Инде айырым яҡтарҙың бөтөн донъя хужалығында ниндәй урын алыуы, ниндәй ғамилдар арҡыры булыуына киләйек. Был ғамилдар ике төрлө: береһе — тәбиғи ғамилдар, икенсеһе — мәҙәни ғамилдар.* Ғ. Ғисмәти.

**3.** *(баш хәреф менән)* Ир-ат исеме.

**ҒАММАЗ** [*ғәр.*] *и. иҫк.* Яла яғыусы, ғәйбәтсе. *Ошо дүрт әҙәмдең шәррен беҙгә күрһәтмә, йә рабби: береһе нәммә, береһе зәмйөн, береһе ғаммаз, береһе шайтан* (Мөнәжәттән).

**ҒАММӘ** [*ғәр.*] *и. иҫк.* Халыҡ. *Был [Харьковты алыу] иһә, иҫтән сыҡмаҫлыҡ, революция тарихы сәхифәһендә башҡорт ғаммәһенең йөҙөн яҡтыртырлыҡ ҡаһарманлыҡтар булһа кәрәк.* Ш. Хоҙайбирҙин.

**ҒАНИД** [*ғәр.*] *с. иҫк. кит.* Үҙ һүҙле, кире, тиҫкәре. *Ғәзиҙем булма һин, шәфҡәтһеҙ ғанид.* Аҡмулла.

**ҒАНҠА** [*ғәр.*] *и. иҫк. миф.* Ҡаф тау артында йәшәй тип һаналған арыҫлан кәүҙәле, бөркөт башлы, донъяла булмаған, фантастик ҡош.

◆ **Хеҙмәт** (*йәки* **мансаб) ғанҡаһы** хеҙмәттә танылған шөһрәтле кеше. *Ҡыҙырҙың мәртәбәһе билгеле, оло мансаб ғанҡаһы үҙе кантон һәм майор.* «Башҡорт шәжәрәләре», 1960.

**ҒАРЗЫ** [*ғәр.*]: **ғарзы хәл** *иҫк.* берәр эш йәки хәл тураһында телдән йәки яҙып еткерелгән үтенес, теләк.

**ҒАРИБ** *с. кар.* **ғәрип** [2].

**ҒАРИЗА** [*ғәр.*] *и.* Үтенес белдереп яҙылған рәсми ҡағыҙ. *Ғариза биреү. Ғариза яҙыу. Ғари-*

*зага кул куйыу. Ғаризаны карау.* ■ *Вазифалы кешеләр граждандарҙың тәкдимдәрен һәм гаризаларын билдәләнгән срокта карарга, уларга яуап бирергә һәм тейешле саралар күрергә бурыслы.* Башҡорт АССР-ының Конституцияһы, 1984.

**ҒАРИЗНАМӘ** [*гәр.*+*фарс.*] *и. иҫк.* Үтенес белдереп яҙылған ҡағыҙ: ғариза. *Казан, Ырымбур, Тобол губерналарында йәшәгән мосолмандарҙы рус поптары гаризнамәләр яҙып, тамгалар һалып, христиан диненә көсләп күсерергә керешкән.* Ғ. Хөсәйенов.

**ҒАРИФ** [*гәр.*] *и. иҫк.* **1.** Аҡыл эйәһе, белемле, уҡымышлы, белдекле кеше. *Бер файҙан: фекер иткән һәр гарифка, дәлил булдың был көндәге мәгарифка.* М. Ғафури. *Йәш вакытыңда уҙ-уҙеңде әүләгыл гариф, мәктәпкә кер! Һәр бер фәндән ал мәгариф.* С. Яҡшығолов.

**2.** *(баш хәреф менән)* Ир-ат исеме.

**ҒАРҠ** [*гәр.*]: **ғарҡ булыу** 1) *иҫк.* һыуға батыу; батыу. *Карап һыуга гарк булды*; 2) нимәгәләр сумыу, күмелеү. *[Мәймүнә:] Ниңә әле беҙ бында папирос төтөнөнә гарк булып ултырабыҙ? Их, баксала һауа ниндәй һәйбәт.* Б. Бикбай; 3) *күсм.* бик нык туйыу. *Вәли гарк булгансы ашай. Бер кабырлык урыны ла калмай.* Ғ. Ғүмәр; 4) *күсм.* бик нык ҡәнәғәт булыу; кинәнеү. *Ғарк булгансы һөйләшеү.* **Ғарҡ итеү** (*йәки* **ҡылыу**) 1) һыуға батырыу; батырыу. *Дошман бер тактауһыҙ контратака яһап, уны [батальонды] йылгага этеп төшөрөп, гарк иттерергә тырышты.* Ғ. Ибраһимов; 2) нимәгәләр сумдырыу, күмеү. *Ғарк кылды илде йәш диңгеҙе, өҫкә төштө хәсрәт тауҙары.* С. Ҡудаш.

**ҒАРУЗ** [*гәр.*] *и. әҙ.* Ҡыҫҡа һәм оҙон ижектәрҙең алмашынып килеүенә нигеҙләнгән көнсығыш поэзияһындағы шиғыр төҙөлөшө. *Ғаруз төрки телле поэзияның, шул иҫәптән башкорт шигырының тәбигәтенә шактай ят күренеш.* К. Әхмәтйәнов.

**ҒАРЫЗ** [*гәр.*]: **Ғарыз итеү** (*йәки* **ҡылыу**) теләк, үтенес менән мөрәжәғәт итеү, уны кемгәлер еткереү, аңлатыу, белдереү. *Беренсе тапкыр һеҙгә ысын мөхәббәт гарыз итәм.* М. Ғафури. *Кемгә барайык беҙ илап, кылып гарыз, шикәйәтте кай урынга беҙ бирәйек* (Мөнәжәттән).

**ҒАРЫЛДАУ** *ҡ.* Ҡалын йәмһеҙ тауыш сығарыу. *Алыҫтан гарылдаган гармун тауышы ишетелә.* И. Көҫәпҡол.

**ҒАРӘТ** [*гәр.*] *и. иҫк. кит.* Баҫҡынсылыҡ, сапҡын; барымта. *Сыңгыҙ уҙ баҫкынлыгы дәүерендә .. Кыпсак таифәһен кәтлигам һәм гарәт менән тамам һәләк иткән.* «Башҡорт шежәрәләре», 1960.

**ҒАСА** [*гәр.*] *и. иҫк. кит.* Таянып йөрөй торған таяҡ. *Хәҙрәте Ярулла Муса башына төштө гаса.* Ш. Бабич.

**ҒАСАБ** [*гәр.*] *и. иҫк. кит.* Нервы, һеңер.

**ҒАСАБА** [*гәр.*] *и.* **1.** *кар.* **аҫаба.**

**2.** Ҡәбилә, ырыу. *Менеп шәп ат, тотоп камсы, мал эйҙәп, йыйылып сәхрәлә йөрөгәндәр менеп ат, был ергә гасабабыҙ булып шат.* С. Яҡшығолов.

**ҒАСАБИ** [*гәр.*] *с. кит.* Ҡыҙыу, ҡыҙып китеүсән, ҡыҙмалы. *Ғасаби булыу. Ғасаби рәүештә яҙа башлау.* ■ *Ғөмүмән артист халкы гасаби була.* Д. Юлтый.

**ҒАСАБИЛАНЫУ** *ҡ. кит.* Ҡыҙып китеү, ярһыу, ҡыҙыу. *Новиков кулына тоткан сумкаһын кире карауатка атып бәрҙе. Ғасабиланып иҙәндә йөрөй башланы.* Д. Юлтый.

**ҒАСИ** [*гәр.*] *с. иҫк. кит.* **1.** Буйһонмай баш күтәргән, буйһонмаусан боласы. // *Хөкөмгә буйһонмаган крәҫтиәндәргә гасиҙарга кылынган мөгәмәлә илә мөгәмәлә иткәндәр.* М. Һаҙыев.

**2.** Гөнаһ эшләгән; гөнаһлы. *[Йыһан:] Был йүләр бәндәләрең булмаһа, мин ни кылыр инем, был гаси колоңа, раббым, ниҙән ризалык бирер инең.* Х. Ибраһимов. *Мин гөнаһлы, мин алланың бер гасие* (Мөнәжәттән).

**ҒАСЫР** [*гәр.*] *и. кар.* **быуат**[2]. *Тыныс тормош килтерҙеләр тыуган илгә батырҙар. Даны һүнмәҫ ул ирҙәрҙең мактар тыуыр гасырҙар.* Ҡ. Даян.

**ҒАТА** [*гәр.*] *и. иҫк. кит.* **1.** *кар.* **бүләк**[1].

**2.** *(баш хәреф менән)* Ир-ат исеме.

□ **Ғата ҡылыу** бүләк итеү. *Донъя булгас, шулай [төрлөсә] булмай мөмкин түгел — хак тәгәлә тогро юлды кылһын гата.* М. Ғафури.

**ҒАТИҠА** [*гәр.*] *с. иҫк. кит.* **1.** Боронғо, иҫке; оҙаҡ торған. **Әҫәре ғатиҡа** 1) бик борондан ҡалған, боронғо заманға ҡараған нәмәләр; 2) археология ҡомартҡылары. *Музейҙың тарих, әҫаре гатика, этнография һәм китапхана бүлемдәре беренсе сентябргә асылды.* М. Ғафури.

**2.** *(баш хәреф менән)* Ҡатын-ҡыҙ исеме.

**ҒАУ** *и. диал.* Ғауға. *Ғау куптарыу. Ғау сыгарыу.*

**ҒАУАМ** [*гәр.*] *и. иҫк. кит.* Халыҡ; халыҡ төркөмө. *Йырҙарымды ишетәһегеҙме, дуҫтарым эшсе гауам?* Б. Ишемғол. / Уҡымаған, аңһыҙ, наҙан халыҡ. *Боҙмаһын кәйефең гауамдан пак исемең тапалыу[га], ниндәй файҙа һандугаска бер ишәктән макталыу[ҙан]?* Б. Мирзанов. *Ололарҙан ярҙам юк, игнәт юк, гауамдарҙа гилем, диянәт юк* (Мөнәжәттән).

**ҒАУҒА** [*фарс.*] *и.* Күмәк кеше ҡатнашындағы тәртипһеҙ ҡысҡырыш, шау-шыу; бола. *Ғауга куптарыу. Ғауга сыгарыу.* ■ *Каракөлөмбәт халыкка гауга һалды, намыҫланмай сеп-сей ялган бер һүҙ әйтеп.* «Бабсаҡ менән Күсәк». /*иҫк.* Нимәнелер даулап ҡуйылған дәғүә. *Мәжлесенә карай гына гаугабыҙ бар, коҙогона карай гына күнәгем бар.* Аҡмулла.

◆ **Ғауға кеше** сәбәпһеҙ тауыш сығарырға яратҡан, талаш сығарыусан кеше.

● *Бер калак ашым, гаугаһыҙ башым.* Мәҡәл.

**ҒАУҒАЛАНЫУ** *ҡ.* Шау-шыу ҡуптарып ҡысҡырыу. *Салгыйына ут капкандай гаугалана Акмырҙа, уның тыныс булганы юк.* А. Игебаев. *Ул [М. Фәйзи] каты сир газабын кисерә. .. Беҙ уның өсөн борсолабыҙ, гаугаланабыҙ. Ә ул быны теләмәй...* С. Кулибай. .. *Садрислам .. ауыл кешеләре танып алмагайҙары, тип гаугаланып, Мәгрифәһен был хәтәр кунакты тиҙерәк .. олактырыу ягын йәһәтләргә кушкан.* Ф. Иҫәнғолов.

**ҒАУҒАЛАУ** *ҡ.* Ғауға сығарыу, тауышланыу. *Ғаугалап килеп инеү.*

**ҒАУҒАЛАШЫУ** *к. урт. кар.* **ғауғалау.**

**ҒАУҒАЛЫ** *с.* Шау-шыулы, талаш-тартышлы, тауышлы. *Ғауғалы эш. Йыйылыш ғауғалы булды.*

**ҒАУҒАСЫ** *и.* Шау-шыу, ыҙғыш-талаш сығарып йөрөгән кеше.

**ҒАУҒАСЫЛ** *с.* Шау-шыу, ыҙғыш-талаш куптарыусан. *Ғауғасыл кеше.*

**ҒАУДАТ** [*ғәр.*] *иҫк. кит.*: **ғаудат итеү** ҡайтыу, кире ҡайтыу. *Был затты Бохаранан ғаудат иттек.* Аҡмулла.

**ҒАУУАС** [*ғәр.*] *и. иҫк. кит.* Һыуға оҫта сумыусы. *Мәғариф диңгеҙенә [бөтә халыкҡа] юл асылһа, ынйы өсөн ғауwас булып сумасактар.* М. Ғафури.

**ҒАУЫМ: бер ғауым** *һөйл.* бер аҙ, бер ни тиклем, бер ни хәтле. *Бер ғауым юл. Бер ғауым эшләп алыу. Бер ғауым торғас.*

**ҒАФИЛ** [*ғәр.*] *с.* **1.** Иғтибарһыҙ, уйһыҙ, вайымһыҙ, ғәмһеҙ. *Эй, йоко мискәләре һәм алланың ғафил бәндәләре!* С. Ҡудаш. // *Һәр бер милләт мәғарифка һалышалыр, һеҙҙәр ғафил ятаһығыҙ, башкорттарым.* С. Яҡшығолов.

**2.** *диал.* Меҫкен.

□ **Ғафил булыу** 1) иғтибарһыҙ, вайымһыҙ булыу. *Егет булған елеп үтер, ел артынан барып етер, ғафил булған арткa китер* (Мөнәжәттән); 2) белмәйенсә буш ҡалыу, һемәйеү. *[Арслан:] Берегеҙ ҙә ғафил калмағыҙ, хәҙер бында тансалар башлана.* М. Ғафури.

**ҒАФИЛЛЕК** *и.* Ғафил булыу (1 мәғ.), ғафил булған хәл. *Ғафиллек аркаһында. Ғафиллек күрһәтеү.* ■ *[Кәбир — Хөсәйенгә:] .. Әллә ғафиллек күрһәтеп, Мәжит Ғафуриҙың минән көлөп яҙған шиғырҙарын баҫтырып сығарғанһығыҙ.* С. Ҡудаш.

**ҒАФИР** *с. иҫк. кит.* Күп нәмәне эсенә алған киң күләмле. *Эй илаһым, рәхмәт әйлә, эй раббым, ғафир йыһан.* М. Өмөтбаев.

**ҒАФИФ** [*ғәр.*] *с. иҫк кит.* Ғиффәтле. *Ғафиф кыҙ.*

**ҒАФИФАНӘ** [*ғәр.*] *р. иҫк. кит.* Саф, эскерһеҙ рәүештә.

**ҒАФФАР** [*ғәр.*] *и. иҫк. кит.* Ғәфү итеүсе. *Таштым, шаштым, куптым тулкындай, әле ғаффар булып, әле каһһар... холоҡландым тәңрем холкондай.* Ш. Бабич.

**ҒАШИҠ** [*ғәр.*] *с.* **1.** Кемгәләр мөхәббәт хисе тотҡан, яратҡан. *Мин ғашикмын үҙеңә, кашкайың менән күҙеңә* (Халыҡ йырынан). // *Ғашиктарҙы төн аңлай ул — яңғыҙҙарын калдыра.* М. Кәримов.

**2.** Нимәгәләр һоҡланыу хисе тотҡан. *Мин әлегә тик кояшка ғашик — уны һөйәм, унан һөйөләм.* Ғ. Юнысова.

□ **Ғашиҡ булыу** 1) мөхәббәт хисенә бирелеү. *Ғашик булыу хәле кыйын икән — баҫып кына алды йөрәктән* (Халыҡ йырынан); 2) һоҡланыу, яратыу хисенә бирелеү. *Ғашик булыу.* **Ғашиҡ итеү** 1) мөхәббәт хисе уятыу; 2) һоҡланыу, яратыу хисе уятыу. *Һәммә халыкты үҙенә ғашик иткән һөйөклө һары ләлә кинәт кенә шиңә.* М. Фәйзи. **Ғашиҡ тотоу** кемгәләр ҡарата һөйөү тойғоһо булыу. *Ғашик тотоп йөрөү.*

**ҒАШИҠЛАНЫУ** *к.* Ғашиҡ булыу, яратыу. *Килеп торҙом бейек яр башына, ғашикланып карап таң нурына.* Ғ. Амантай.

**ҒАШИҠЛЫҠ** *и.* Ғашиҡ булыу (1 мәғ.) хәле. *Мөхәббәт баҫкысы менән ғашиклык баҫкысы араһында бик күп айырма бар.* М. Ғафури. *Ғашиклыктың хәле яман икән, янып торған утка төшөрөр* (Халыҡ йырынан).

**ҒАШШАҠ** [*ғәр.*] *с. иҫк.* Үтә ныҡ ғашиҡ. *Ғашшак булыу.*

**ҒАШШАҠЛЫҠ** *и. иҫк. кит.* Үтә ныҡ ғашиҡ булған хәл. ■ *Белһәң ине һин уның аҡ күңеленең йомшаклығын, бер күрер өсөн был көндәрҙә һиңә ғашшаклығын.* Ш. Бабич.

**ҒАЮР** *с. иҫк. кит.* Ғәйрәтле, ҡыҙыу тәбиғәтле; ғәййәр, батыр. *Ғаюр булыу.* ■ .. *Был көнгәсә гел эшләнем выждан менән, күп күрәштем нык батыр күңелем ғаюр ҙур йән менән* (Мөнәжәттән).

**ҒАЯН** [*ғәр.*] *с. иҫк. кит.* **1.** Күҙгә күренеп торған, ап-асыҡ, билдәле. *Эй илаһым, әүүәл ахыр эштәрем заһир, ғаян.* М. Өмөтбаев.

**2.** *(баш хәреф менән)* Ир-ат һәм ҡатын-ҡыҙ исеме.

□ **Ғаян итеү** (*йәки* **ҡылыу**) асып биреү, күрһәтеү. *Шәриғәтте кем укытып баян кылыр, ғибәҙәттең әхкәмен ғаян кылыр* (Мөнәжәттән).

**ҒИБРӘТ** [*ғәр.*] *и.* **1.** Уйланырға мәжбүр иткән, һабаҡ бирерлек бер тормош миҫалы. *Ғибрәт булыу. Ғибрәт өсөн. Ғибрәт итеп һөйләү.* ■ *[Хан:] Кем буйһонмай минең әмергә? .. Ғибрәт өсөн ошо төйәккә тау өйөрмөн һеҙҙең һөйәктән.* М. Кәрим. .. *Был ғәжәйеп батыр егетте [Абдрахманды] башкаларға ғибрәт булырлык итеп яҙаламаксы булғандар.* Ә. Вахитов.

**2.** *р. мәғ. диал.* Сиктән тыш, үтә, бик. *Баҙарҙа кеше ғибрәт күп.*

● *Ғибрәт итмәгән, үҙе ғибрәттә калыр.* Әйтем. *Ямандан ғибрәт ал, якшынан шөһрәт ал.* Әйтем.

**ҒИБРӘТЛЕ** *с.* Һабаҡ алырлыҡ, аҡылға өйрәтерҙәй. *Ғибрәтле хәл. Ғибрәтле һүҙ.* ■ *Олатайҙарҙың акыллы кәңәштәрен, ғибрәтле тарихтарҙы, йорт-илдең үткәндәре тураһындағы һүҙҙәрҙе ошонда [ауылда] ишетмәһәң, кайҙа ишетәһең?* «Ағиҙел», 1962, № 9.

● *Ата ғәйрәтле булһа, бала ғибрәтле була.* Мәҡәл.

**ҒИБӘҘӘТ** [*ғәр.*] *и.* **1.** Доға, намаҙ. *Ғибәҙәт йорто.* ■ *БАССР граждандарына выждан ирке, йәғни теләгән бер динде тотоу йәки бер ниндәй динде лә тотмау, дини ғибәҙәттәрҙе үтәү, йәки атеистик пропаганда алып барыу хокуғы гарантиялана.* Башҡорт АССР-ының Конституцияһы, 1984.

**2.** *(баш хәреф менән)* Ир-ат исеме.

□ **Ғибәҙәт ҡылыу** доға, намаҙ уҡыу. *Көрьән кушканды тотһа, кеше ғибәҙәт кылыуҙан бушамаҫ ине.* Ә. Мифтахова.

**ҒИБӘҘӘТХАНА** [*ғәр.* + *фарс.*] *и.* Ғибәҙәт ҡылыу йорто (мәсет, сиркәү, костёл, храм һ. б.). *Бик күп кешеләр шып-шым булдылар, ғибәҙәтханаларына барып тулдылар.* М. Ғафури.

**ҒИБӘРӘ** [*ғәр.*] *и. кит.* **1.** Бер нисә һүҙҙән торған берәмек, һүҙ теҙмәһе, һүҙҙәр, әйтемдәр. *[Сабир] йомшак, ләкин һәр һүҙе әмер урынына кабул ителерлек ғибәрәләр менән һүҙ башланы.*

И. Насыри. *Башҡорт теле, башҡорт ғибәрәһе менән яҙыусыларыбыҙҙан Ғөбәй Дәүләтшин, Х. Ғәбитов, Т. Йәнәби һәм Батыр Вәлидовтарҙы алырға мөмкин.* Д. Юлтый.

**2.** Яҙылғандың өҙөгө *[Хәҙрәт:] Һаҙый, һин ғибәрә уҡы!* М. Ғафури.

**ҒИБӘРӘТ** [*ғәр.*] *хәб. функцияһында* Сығанаҡ килештәге һүҙ менән ҡушма хәбәр яһап, нәмәнең нимәнән торғанын, нимәне аңлатҡанын белдерә. *Шахта имгәкләп, теҙләнеп йөрөрлөк рәүештә ҡаҙылған тар-тар коридорҙарҙан ғибәрәт ине.* М. Ғафури. *Ҡыйғол партизандары үткән юл тынғыһыҙ төндәрҙән, ҡаты бәрелештәрҙән ғибәрәт.* Я. Хамматов. *Күцелһеҙ, гел бер төрлө генә күренештәрҙән ғибәрәт ялан артта ҡалды.* И. Насыри.

**ҒИҘҘӘТ** [*ғәр.*] *и.* Ирһеҙ ҡалған ҡатындың икенсе иргә бармай йөрөп торорға тейеш булған ваҡыты. *Ғиҙҙәт тултырыу. Ғиҙҙәт һаҡлау.* ■ *Ҡылысбай, дини ғәҙәт буйынса дүрт ай ғиҙҙәт тултырғас, абышкаһы үлгән Гөлзада исемле тол ҡатынға өйләнде.* Ш. Шәһәр. *Атаһы үлгәс, әсәһе Сафура ғиҙҙәте тулыу менән .. Ғилаж исемле кешегә көндәш өҫтөнә иргә барҙы.* Ж. Кейекбаев.

**ҒИЗАМ** [*ғәр.*] *и. иҫк.* Ололоҡ, бөйөклөк. *Егетмен мин һәр ваҡыт кәберем ҡаҙылһа, тән кумелһә лә, .. теләгем, ғизамыма ҡаршы бераү ҙә һырт ҡабартмаһын..* Ғ. Иҫәнбирҙин.

**ҒИЗЗӘТ** [*ғәр.*] *и. иҫк.* **1.** Ҡәҙер, хөрмәт; дәрәжә, шөһрәт. *Ғиззәте бар.* ■ *Ғиззәт менән үлеү артығыраҡ, зилләт менән ерҙә йәшәүҙән.* Д. Юлтый.

**2.** *(баш хәреф менән)* Ир-ат исеме.

**ҒИЗЗӘТЛЕ** *с. иҫк.* Ҡәҙерле, хөрмәтле. *Ғиззәтле булыу.* ■ *Дилә хатты уҡырға тотондо: .. һеҙки ғиззәтле вә хөрмәтле улып торғусы минең күҙ нурындай күргән хәләл ефетем Гөлйөҙөмгә ..* Һ. Дәүләтшина.

**ҒИЗЗӘТЛӘҮ** *ҡ. иҫк.* Ҡәҙерләү, хөрмәтләү. *Ғиззәтләне уны [Мәйтанды] хан, урын бирҙе янынан.* «Башҡорт шәжәрәләре», 1960.

**ҒИЗЛЕ** *с. кит. иҫк.* Оло, бөйөк. *Ғизле булыу.* ■ *Күп заман тәкрир һөйләнеп аңлашылмаҫ ғизле эш.* С. Яҡшығолов.

**ҒИЗЛӘҮ** *ҡ. иҫк. кит.* Хөрмәтләү, ололау. *Сәйран иттем .. аҡ фәрештәм эҙләнем, эҙләгән ғишки алиһәмде күңелдә ғизләнем.* Х. Ғәбитов.

**ҒИЗМӘТ** [*ғәр.*] *и. иҫк.* Бөйөклөк. *Ал таң ата .. Күҙең аҫ. Фекерләп ҡадир хоҙайҙың ғизмәтен биленде бөк ..* С. Яҡшығолов.

**ҒИЛ** [*ғәр.*] *и. иҫк.* Йәшерен башҡарылған эш, йәшерен асыу; кенә. *Дуҫты мән был икеһе моңлашаҙы, уй уйлап, ғил табып серләшәҙе.* «Буҙйегет».

**ҒИЛАЖ** [*ғәр.*] *и. иҫк. кит.* **1.** Сара, әмәл, дауа, дарыу. *[Ҡыҙ] бер йыл ҡайғылы булып йөрөнө. Табиб даркар ғилаж тапманы.* «Буҙйегет».

**2.** *(баш хәреф менән)* Ир-ат исеме.

**ҒИЛЕМ** [*ғәр.*] *и.* **1.** Ниндәйҙер өлкәләге мәғлүмәттәр йыйымы; белем. *Тел ғилеме. Ғилем эйәһе. Әҙәбиәт ғилеме.* ■ *Мөхәмәтсәлим Өмөтбаев .. алдынғы рус культураһын үҙләштереп, уның байлыҡтары аша башҡорт халҡы тормошона ҡараған, башҡорт халҡын мәғрифәт юлына аяҡ баҫтырыуға хеҙмәт иткән тәүге ғилем эйәһе ине.* Ә. Харисов.

**2.** Фән. *Ғилем өйрәнеү.* ■ *Айбулат .. һорау бирҙе: — Нәмә була ул, политика, ниндәй ғилемгә инә?* Һ. Дәүләтшина.

**3.** Ғалим. *Ғилем булыу // Ғилем кешеләр.* ■ *Һай кәҙерле һай ғилем, һай-һай тәбәррек зат була.* Ш. Бабич.

□ **Ғилем алыу** уҡыу, белем алыу.

● *Ғилем китаптың эсендә лә, тышында ла.* Әйтем. *Ғилем — ҡош, аҡыл — ҡанат.* Әйтем.

**ҒИЛЕМДАР** [*ғәр.* ⟨ *фарс.*] *и.* **1.** Ғилем эйәһе.

**2.** *(баш хәреф менән)* Ир-ат исеме.

**ҒИЛЕМЛЕ** *с.* Ғилемгә эйә; уҡымышлы, белемле. *Ғилемле кеше. Ғилемле булыу.*

**ҒИЛЕМЛЕК** *и.* Ғилемле, белемле булған хәл. *Ғилемлегә ҙур.* ■ *Әл-Хәсән мулла Пономарҙа ғилемлек шәп тиҙәр,.. хат яҙырлыҡ зиһене юҡ, тип маҡтайҙар.* Ш. Бабич.

● *Ғилемлек — нур, наҙанлыҡ — хур.* Әйтем.

**ҒИЛЙӘТ** [*ғәр.*] *и. иҫк. кит.* Һайлап алынған, иң яҡшы, иң бөйөк нәмә. *Сикһеҙ хөрриәтте мин һөйәм, шундай ғилйәтте эҙләйем һәм шуға мин елкенәм.* М. Ғафури.

**ҒИЛЛӘ** [*ғәр.*] *и.* **1.** Ауырыу, сир, сырхау. *[Атайым] ун туғыҙынсы йылда тиф ғилләһенән вафат булғайны.* С. Кулибай.

**2.** Кәмселек. *Соконһаң, бик яҡшы кешенең дә була бер ғилләһен табырға.* Б. Вәлит.

**3.** *һөйл.* Нимәнеңдер нигеҙендә ятҡан төп сәбәп, дәлил. *[Ташбулат:] Минең ярлылыҡтың бөтә касафаты, бөтә ғилләһе өйҙөң нигеҙендә.* С. Агиш.

♦ **Был ни ғиллә** ниҙеңдер сәбәбен белмәй аптырағанда әйтелә. *Был ни ғиллә! Кисә генә ике машина [утын] килтерткәйнем. .. Иртән торһам, аҙбар буйына шыплап өйөп ҡуйылғансы!..* Ф. Иҫәнғолов.

**ҒИЛЛӘТ** [*ғәр.*] *и. иҫк.* Ғиллә.

**ҒИЛМАН** [*ғәр.*] *и. иҫк. кит.* **1.** Ир бала, малай.

**2.** Дини хөрәфәт буйынса: йәннәт хеҙмәтселәре. *Унда куктә, бик бейектә .., унда ғилмандар.* Б. Ишемғол. *Ергә иблисте һөрөү булды ҡыҙыҡ: хур вә ғилмандар йөрөйҙәр пыр туҙып..* Ш. Бабич.

**3.** *(баш хәреф менән)* Ир-ат исеме.

**ҒИЛМЕҠӘЛАМ** [*ғәр.*] *и. иҫк. кит.* Дин фәлсәфәһе. *Ҡыйышҡы ауылы Өфө һәм беҙҙең тирәлә .. мантиҡ һәм ғилмекәлам фәндәрен уҡытыуы менән мәшһүр.* М. Ғафури.

**ҒИЛМЕНАФИҠ** [*ғәр.*] *и. иҫк. кит.* Файҙа бирә торған ғилем, файҙалы фән. *Хәлфә доға ҡылды, тәкрар тәүфиҡ һәм ғилменафиҡ теләне.* М. Ғафури.

**ҒИЛМИ** [*ғәр.*] *с.* Ғилемгә бәйле, ғилемгә мөнәсәбәтле; фәнни. *Ғилми дәрәжә. Ғилми тикшеренеү институты. Ғилми хеҙмәт. Ғилми хеҙмәткәр. Ғилми яҙмалар.* ■ *Йәмғиәттең ихтыяждарына ярашлы рәүештә дәүләт фәнде планлы үҫтереүҙе һәм ғилми кадрҙар әҙерләүҙе тәьмин итә, ғилми тикшеренеүҙәр һөҙөмтәләрен халыҡ хужалығына һәм тормоштоң башҡа сфераларына индереүҙе ойоштора.* Башҡорт АССР-ының Конституцияһы, 1984.

**ҒИЛМИ-ТЕХНИК** *с.* Ғилемгә һәм техникаға мөнәсәбәтле. *Ғилми-техник мәғлүмәттәр.*

**ҒИЛМИӘ** [*ғәр.*] *и.* **1.** *иҫк. кит.* Белем күләме. *[Мулланың] кеүән ғилмиәһенең һүң дәрәжәлә түбәнлеге .. ике араны боҙа башланы.* М. Ғафури.

**2.** *(баш хәреф менән)* Ҡатын-ҡыҙ исеме.

**ҒИЛӘҮӘ** [*ғәр.*] *и. иҫк. кит.* Өҫтәмә, ҡушымта. *Китапҡа ғиләүә. Ғиләүә яҙыу.* ■ *Я. Юмаев Дәрдмәндең «Ҡарап» шиғырына ғиләүә яҙған.* В. Әхмәҙиев.

**ҒИМАРӘТ** [*ғәр.*] *и. иҫк. кит.* **1.** Ҡоролма, ҡаралты, йорт. *Ҡышлау ауылдары ваҡытлы ғына торлаҡ булып, ҡалаға әйләнеп китә алманылар, уларҙан оҙаҡҡа сыҙарлыҡ ҙур ғимараттәр ҡалманы.* Ғ. Фәхретдинов. *Был ғимарәт [карауанһарай], был оҫталыҡ сәнғәт бары олатайҙар ҡулы.* Х. Ғәбитов.

**2.** Төҙөлөш. *Ғимарәт эшсеһе.* ■ *Ауыл хужалығы мәктәптәре һалыу кеүек ғимарәт эштәрендә 8712 кеше [ҡатнашты].* «Совет Башҡортостаны-ның ун йылы», 1929.

**ҒИНУАР** [*рус.* январь ⟨ *лат.*] *и.* Календарь йылының беренсе айы [*кар.* **календарь**]. *Ғинуар айы. Ғинуар башы. Ғинуар һыуығы.* ■ *Ғинуар ни тигән һүҙ? Боронғо Рим кешеләре Янус тигән алла хөрмәтенә уны «януарис» тип атағандар.* «Совет Башҡортостаны», 1966, 1 ғинуар.

**ҒИНӘЙӘТ** [*ғәр.*] *и. иҫк. кит.* Ярҙам, хәстәрлек.

□ **Ғинәйәт итеү** [*йәки* **ҡылыу**] ярҙам итеү, хәстәрлек итеү. *Ғинәйәт ҡылһа нә яраб үҙем байғош, атым арыҡ, Ҡазан шәһәренә бер барып күрә алманым, дәриға аһ.* Аҡмулла.

**ҒИРАСИ** [*ғәр.*] *с. иҫк.* Уҫал, үткер. *Килен ғираси булғанлыҡтан, үҙем саҡ һыйып торам.*

**ҒИРФАН** [*ғәр.*] *и.* **1.** *иҫк.* Аң, белем, тәрбиә. *Ғирфан абзый бер шәһәрҙә ғирфаны юҡ бер ахун.* Ш. Бабич. *Кемдең кем зауҡы юҡ — ғирфаны юҡтыр, кемдең ғирфаны юҡ — выжданы юҡтыр.* Аҡмулла.

**2.** *(баш хәреф менән)* Ир-ат исеме.

**ҒИСАБАД** [*ғәр.*] *и. иҫк. һөйл.* Христианлыҡ, христиан дине кешеһе. *Ғисабадтар йыйылышып, бик күп уҡыйҙар ғәзитте; ҡытайҙарҙың баҙарында бик күп күрҙек кәмитте* (Бәйеттән).

**ҒИСМӘТ** [*ғәр.*] *и.* **1.** *иҫк. кит.* Күңел сафлығы, намыҫ. *Күҙҙәрең, ул күҙҙәреңдә аңҡый ғисмәт, балҡый нур.* Б. Мирзанов.

**2.** *(баш хәреф менән)* Ир-ат исеме.

**ҒИСЪЯН** [*ғәр.*] *и. иҫк.* Фәтнә, бола. *Шәһит Хоҙайбирҙин 1921 йыл Кронштадта сыҡҡан ғисъянды баҫтырырға үҙе теләп бара.* Ғ. Әбдрәшитов.

**ҒИСЪЯНСЫ** *и. иҫк.* Фетнәсе, боласы. *Уның [Батыршаның] рәнйетелгән һәм ғазапланған күңеленән, ғисъянсы йөрәгенән сыҡҡан һүҙҙәренән .. батшаның үҙенә лә тел тейә.* Ғ. Хөсәйенов.

**ҒИСЪЯНСЫЛЫҠ** *и. иҫк.* Татар әҙәбиәтендә революциянан һуң барлыҡҡа килеп, сикләнмәгән шәхси азатлыҡты яҡлау, иҫке мираҫты тулыһынса инҡар итеү йүнәлешен алған әҙәби ағым. *Ғисъянсылыҡ ағымы. Ғисъянсылыҡ поэзияһын тәнҡитләү.* ■ *.. Иҫке поэтик мираҫҡа өҫтән ҡарау шәкирҙәрҙә яңы быуындың бунтарлығын, әҙләнеүҙәрен үҙенә туплаған ғисъянсылыҡ тигән алым [1922 йылдарҙа] шаҡтай көслө үҫеш алды.* Ғ. Рамазанов.

**ҒИФЛӘТ** *и. кар.* **ғәфләт.** *Халыҡ белә тора ғафил ятар. Ғифләттән уяныу юҡ, оялыу юҡ — каруандар үтеп ятар ҡатар-ҡатар.* Аҡмулла.

**ҒИФРИТ** [*ғәр.*] *и.* **1.** *миф.* Ҡурҡыныс, ҙур, яуыз зат; дейеү һымаҡ зат. *Егет .. ҡылысы менән сапҡан икән, ғифриттең башы әҙ генә өҙөлмәй ҡалған* (Әкиәттән).

**2.** *күсм.* Үтә ныҡ ҙур, бик көслө, ҡеүәтле, ҡурҡыныс нәмә. *Суйын ғифрит: «Һеҙҙе йотамын» ти, кәбәндәргә ҡарап үкерә ..* Ғ. Мәсғүт. *[Майор Мораҙымға ҡарап:] Кәүҙә бик дәү, ғифрит кеүек бит! Дошман күҙенә әллә ҡайҙан күренеп торор. Юҡ, бармай ул разведчикка.* Ғ. Әмири. *Ғифриттәй таҙа Солтан ағайым да юғалған икән. .. Һабан түйҙарында алдына сығыр батыр булмай торғайны.* В. Исхаҡов. *Ваҡ аттарға өйрәнгән кешеләргә айғыр ғифриттәй күренә. Менеү түгел, ҡарауы ҡурҡыныс. Түше ҡайһылай бит, саҡ ҡына ҡуҙғалһа, мускулдары уйнап китә.* Р. Солтангәрәев.

**ҒИФФӘТ** [*ғәр.*] *и.* **1.** Сафлыҡ, паклыҡ. *Унда шәфҡәт, унда ғиффәт, унда һиҙгер пак күңел. Эске рухта һис берәүгә, һис берәүгә тиң түгел.* Д. Юлтый.

**2.** Ҡыҙҙарҙағы сафлыҡ, намыҫлылыҡ.

**3.** *(баш хәрәф менән)* Ҡатын-ҡыҙ исеме.

**ҒИФФӘТЛЕ** *с.* **1.** Саф, пак. *Ғиффәтле бала. Ғиффәтле булыу.* ■ *Бөгөн беҙ ҡушылдыҡ. Бөтә донъя ана ниндәй саф, ғиффәтле, күркәм.* М. Кәрим.

**2.** Ҡыҙлыҡ намыҫы булған, саф. *Ғиффәтле ҡыҙ.* ■ *Әй ғиффәтле .. Миңлеһылыу. .. Битеңдең иң осонда нурлы миңең. Үҫеп етеп киләләр зифа буйың..* С. Яҡшығолов.

**ҒИФФӘТЛЕК** *и.* Сафлыҡ, паклыҡ, ғиффәтле булған хәл. *Тәбиғәттәге ғиффәтлек.* ■ *Һин юҡкамы [әсәй] .. урмандарҙың бөттө ғиффәтлеге, ә аҡҡоштар биҙҙе күлдәрҙән.* Н. Нәжми.

**ҒИШ-ҒИШРӘТ** [*ғәр.*] *и.* **1.** Һыйлы күңел асыу, уйын-көлкө, кәйеф-сафа; типтереш. *Халыҡтың хәленә баҡһаң, аяныс, мәңге көлмәҫлек. Берәүҙәр типтерә, ғүмер итә ғиш-ғишрәттә.* М. Ғафури.

**2.** *күсм.* Эскеле аҙғын-мөнәсәбәт; уйнаш. *[Бай малайы] бер нисә ғиш-ғишрәт менән шөғөлләнгән дә, ҡыҙҙы ҡарсыҡ ихтиярына тапшырып, күҙҙән юғалған.* С. Ҡудаш.

□ **Ғиш-ғишрәт итеү** (*йәки* **ҡылыу**) 1) ашап-эсеп, күңел асыу; типтереү. *Тәүәкәй мең дә һикһән биш ҡаҙаҡҡа баш булды. Һәр тарафҡа күсеп йөрөнөләр, ғиш-ғишрәт ҡылдылар, гәҙеллек менән йорт көттөләр.* «Башҡорт шәжәрәләре», 1960; 2) *күсм.* аҙғынлыҡ ҡылыу, уйнаш итеү.

**ҒИШРӘТ** [*ғәр.*]: **ғишрәт итеү** (*йәки* **ҡылыу**) 1) ашап-эсеп, күңел асыу; 2) эсеп, аҙғынлыҡ ҡылыу. *Коньяк-шампанский ҡулға тотҡан берәү хәҙер ғишрәт итергә.* Х. Ғәбитов.

**ҒИШЫҠ** [*ғәр.*] *и.* Кемгәлер булған көслө яратыу, һөйөү тойғоһо; мөхәббәт. *Ғишыҡ ғазабы. Ғишыҡ уты. Ғишыҡ утында яныу.* ■ *Мин һөйәм, ғишҡым менән эстән көйәм, эстән янам.* Д. Юл-

тый. .. *Ғишкың ғына мине ай иҫертә, әйтеп кенә аңлар ҙа кеше юк* (Халыҡ йырынан). **Ғишыҡ тотоу** яратыу, һөйөү.

● *Ғишыҡ тотоу — ут йотоу.* Әйтем.

**ҒИШЫҠ-ҒӘШРӘТ** *и. йыйн.* Ғишыҡ һәм ғишрәт. *Батша юлға сығып киткәс тә, һеңлеһе егетте төрмәнән сығарып, уның менән ғишыҡ-ғәшрәткә кереште, ти* (Әкиәттән).

**ҒИШЫҠЛАНЫУ** *ҡ.* Ғашыҡ булыу (1 мәғ.). *Ғишыҡланып, утҡа янып, ҡауышмағас ни файҙа* (Халыҡ йырынан).

**ҒИШЫҠ-МӘҒШУҠ** [*ғәр.*] *и. иҫк. кит.* Мөхәббәт. *Ғашиҡтар ҡауыша алмайҙар. Юғиһә, «ғишыҡ-мәғшуҡ» тип тә әйтмәҫтәр ине.* М. Ғафури.

**ҒОЗ** *с. диал.* Ғуж.

**ҒОЗУР** *с. ҡар.* **ғөҙөр.**

**ҒОҠБА** [*ғәр.*] *и. иҫк.* Теге донъя, әхирәт. *Күҙҙәрең төпһөҙ ғаләм. .. Унда ғоҡба. .. Унда йәннәт... Унда ялҡын ... Унда нар...* Б. Мирзанов.

**ҒОЛДОР-ҒОЛДОР** *оҡш.* Күркә тауышын белдергән һүҙ.

**ҒОЛДОРЛАУ** *ҡ.* Ғолдор-ғолдор ҡысҡырыу, ғолдор-ғолдор итеү. *Икмәк әҙер булғас та, тәмле еҫен тойғас та, күк күркә ғолдорланы ауылда арғы оста.* Ғ. Амантай.

**ҒОЛҠ-ҒОЛҠ** *оҡш.* Ҙур-ҙур уртлап шыйыҡ нәмәне йотҡанда тамаҡтан сыҡҡан тауышты белдергән һүҙ. *Ғолҡ-ғолҡ итеү. Ғолҡ-ғолҡ йотоу. Ғолҡ-ғолҡ килеү.*

**ҒОЛҠОЛДАТЫУ** *ҡ.* Ғолҡ-ғолҡ иттереү. *Ғолҡолдатып йотоу.* ■ *Тултырып һалынған ҡырлы стаканды [Ғиндулла] ғолҡолдатып ауыҙына түңкәрҙе.* Ш. Янбаев.

**ҒОЛҠОЛДАУ** *ҡ.* Ғолҡ-ғолҡ итеү, ғолҡ-ғолҡ килеү. *Тамағы ғолҡолдап тора.*

**ҒОЛТ-ҒОЛТ** *оҡш. ҡар.* **ғолҡ-ғолҡ.** *Ғолт-ғолт йотоу.* ■ *[Кәңәшмәләге кешеләр] графиндарҙан һыу ҡойоп, ғолт-ғолт итҡән тауыш сығарып эсә лә һүҙен бөтөрөп, махорка төрә.* А. Таһиров.

**ҒОЛТОЛДАТЫУ** *ҡ. ҡар.* **ғолҡолдатыу.** *Ғолтолдатып эсеү.* ■ *— Сарсаным,— тине малай. Баҡырса морононан .. сәйҙе бер нисә йотом ғолтолдатып һемерҙе лә яңынан тымып ҡалды.* И. Ғиззәтуллин.

**ҒОЛТОЛДАУ** *ҡ. ҡар.* **ғолҡолдау.**

**ҒОЛУИӘТ** [*ғәр.*] *и. иҫк. кит.* Бөйөклөк, юғарылыҡ. *Булманы ғолуиәтең менһәң дә йәш ил тәхетенә.* Б. Мирзанов.

**ҒОМАН** *и. ҡар.* **гөман.**

**ҒОМБАЙ** *и. диал. ҡар.* **дөмбөр**[1] 1.

**ҒОМБО** *и. диал. ҡар.* **суҡмар 1.** *Яҡшы аттарға менеп ғомболар алып һуғып та атам, ғип ҡыуалай [һыртланды] ир солтан* (Халыҡ йырынан).

**ҒОНОҠ** *и. диал.* Йүнһеҙ, һөмһөҙ.

● *Ғоноҡ атаһы менән маҡтаныр.* Әйтем.

**ҒОНСА** *и. ҡар.* **ғунса.** *Баҡсаһында сәскәләр һипкәләйҙәр, тәмле еҫтәр, төрлө-төрлө ғонсалар.* Б. Мирзанов.

**ҒОНСОР** [*ғәр.*] *и. иҫк. кит.* **1.** Ҡатмарлы берәр нәмәнең эсенә ингән бер өлөш.

**2.** Тоҡом, нәҫел; милләт. *Был әйтелмеш ерҙәрге рус ғонсоро бик әҙ булып, барсаһы башҡорт, мишәр, типтәр, ҡаҙаҡ ... булды.* М. Һаҙыев.

**ҒОНУАН** [*ғәр.*] *и. иҫк. кит.* **1.** Рәсми дәрәжә.

**2.** Атама, исем. *Ниндәй сәбәп менән [шағир] үҙенә «Аҡмулла» тигән ғонуанды алған?* Р. Фәхретдинов.

**ҒОП** *оҡш.* Эсе йомшаҡ, тышы ҡатыраҡ нәмәгә һуҡҡанда сыҡҡан тауышты белдергән һүҙ. *Ғоп итеү.*

**ҒОПОЙ** *и. диал.* Мөншөгөр.

**ҒОПОЛДАТЫУ** *ҡ.* Ҡабат-ҡабат ғоп иттереү. *Ғополдатып һуғыу.*

**ҒОПОЛДАУ** *ҡ.* Ҡабат-ҡабат ғоп итеү. *Ғополдап тороу.*

**ҒОРАБ** [*ғәр.*] *и. иҫк. кит.* Ала ҡарға. *Һин ғораб тип уйлағаның асылы шоңҡар булмаһын.* Аҡмулла.

**ҒОРАЗ** [*ғәр.*] *и. иҫк. һөйл.* Юҡ-бар, ваҡ-төйәк нәмә. *Һәр бер эштә ғораз берлән талашабыз, аһ жаһилиәт майҙанында аҙашабыҙ* (Бәйеттән).

**ҒОР-ҒОР** *оҡш.* Урғылып йәки ҡалтырап сыҡҡан тауышты белдергән һүҙ. *Күлгә ширбәтте ебәргәс ырғытып, башланы ҡайнарға күл ғор-ғор итеп.* Ш. Бабич. *Әбей менән бабай ғор-ғор йоҡлай, ти* (Әкиәттән).

**ҒОРЛАУ** *ҡ. ҡар.* **ғоролдау.** *Ғорлап йоҡлап китеү.*

**ҒОРЛО** *бәйл. ҡар.* **ҡорло.**

**ҒОРОЛДАУ** *ҡ.* Ғор-ғор итеү, ғор-ғор килеү. *Ғоролдап йоҡлап китеү.*

**ҒОРРӘ** [*ғәр.*] *и. иҫк. кит.* **1.** Йондоҙ ҡашҡа (ат төҫөнә ҡарата).

**2.** Һайланған иң яҡшы нәмә. *Уларҙың моратынса йөрөй бирһәң, дин ислам ғорраһен ҡырмаҡ кәрәк.* Аҡмулла.

**ҒОРУР** [*ғәр.*] *с.* **1.** Үҙ баһаһын белеп эш итә белгән, үҙ намыҫына кәмселек килтермәй торған. *Ғорур кеше. Ғорур тәбиғәтле. Ғорур булыу.* ■ *Зөлхизәнең йөҙөндә сағылған ғорур тантана һөйөү шатлығы ине.* З. Биишева. *Үмәр бөгөн үҙе майҙан тотҡан һымаҡ ғорур.* Һ. Дәүләтшина. *[Фәхри] майҙанда көрәшкән кешеһен йыҡҡан кеүек ғорур атлап, ауыл ягына йүнәлде.* Б. Бикбай.

**2.** *кусм.* Мөһабәт, мәғрур, баш эймәҫ. *Ғорур тауҙар.* ■ .. *Зифа ҡайындар ҙа, олпат имәндәр һәм ғорур ҡарағайҙар ҙа биҙәй уның [Ағиҙелдең] ярҙарын.* Ғ. Әмири. // *Егет [Абдрахман] өндәшмәгән. Бынау ҡая кеүек ғорур һәм ҡаты торған ул.* Ә. Вахитов.

**ҒОРУРЛАНЫУ** *ҡ.* Ғорурлыҡ кисереү, ғорур булыу. *Совет кешеһе үҙенең бөйөк хеҙмәте менән ғорурлана.* ■ *Ата-бабаларҙың Ватан өсөн үҙ-үҙҙәрен аямай көрәшеүе совет һуғышсыларын рухландырҙы, уларҙа героик үткәндәр менән ғорурланыу тойғоһо уятты.* М. Ғималова.

**ҒОРУРЛЫҠ** *и.* Нимәнәндер (ил, халыҡ һ. б.) ныҡ ҡәнәғәт булыу, хаҡлы рәүештә маһайыу тойғоһо; ғорур булыу. *Ғорурлыҡ тойғоһо. Ғорурлыҡ хисе. Ғорурлыҡ менән һөйләү. Ғорурлыҡ уяныу.* ■ *Рәүф Әбделғәни улы Дәүләтов Черниговөлкәһенең Лоево районында илебеҙҙе азат итеү өсөн һуғышҡанда батырҙарса һәләк булды. .. Уның күрһәткән батырлығы беҙҙең ғорурлыҡ ул.* Ғ. Бирҙин.

**ҒОР-ШАР, ғор ҙа шар** *оҡш.* Ныҡ ғоролдаған

тауышты белдергән һүҙ. *Ғор-шар итеү. Ғор-шар килеү. Мәскәй әбей гор-шар йоклай, ти* (Әкиәттән).

**ҒОСМАНЛЫ: ғосманлы төрөк** *иҫк.* Төркиә төрөгө.

**ҒОССА** [*ғәр.*] *и. иҫк. кит.* Ҡайғы, хәсрәт, һағыш. *Һарғайып төн йокламай таң ашабыҙ, гакылдан госса менән аҙашабыҙ.* Аҡмулла.

**ҒОФРАН** [*ғәр.*] *и.* **1.** *иҫк.* Ғәйептең кисерелеүе; ғәфү. *Һин Ғәлиәскәр Ғафур, гофран талап кыл алланан.* Ш. Бабич.

**2.** *(баш хәреф менән)* Ир-ат исеме.

**ҒӨҘӨР** [*ғәр.*] *и.* **1.** Сәбәп, һылтау. *[Якшыголов] кыҫылыу һәм ерҙәрҙәң булгеләнеү гөҙөрөн башкорттарҙың үҙҙәренә — ер һатыуҙарына кайтарып калдыра.* Ғ. Хөсәйенов. *Бәндәнең битенән алма гөҙөрһөҙ. Рәнйеүенән дөрләп яныр күмерһеҙ.* А. Игебаев.

**2.** Үтенес, ялыныс. // *Ғөҙөр һүҙем шул һеҙгә: кыҙыңды бир һин беҙгә* (Туй йырынан).

**ҒӨҘӨРЛӨ** *с.* Аҡларлыҡ, иҫәпкә алырлыҡ сәбәпле. *[Зариф — һалдаттарға:] Ғаиләгеҙ өсөн кайгырмагыҙ. Зәгиф, гөҙөрлө, карт кешеләргә вә балиг булмаған балаларығыҙға батша хәҙрәттәре пособие бирәсәк.* Н. Ҡәрип.

**ҒӨЗЗӘТ** *и. кар.* **ғиҙҙәт.** *[Мулла:] Хәҙер Үмәр кыҙы Гөлйөҙөм һинең улыңа хәләл ефетлеккә ярамай .. уны яңынан алган хәлдә лә ике ай гөззәт һакларга .. кәрәк.* Һ. Дәүләтшина.

**ҒӨЛӘМӘ** [*ғәр.*] *и.* **1.** Уҡымышлы кешеләр; ғалимдәр.

**2.** Дин белгестәре, дин әһелдәре. *Әһле гөләмә.* ■ *[Сабир мулла:] Был да мәглүм булһын ки, беҙ гөләмәләрҙең бында бер ҙә кәҙере юк икән.* Б. Ишемғол.

**ҒӨМДӘ** [*ғәр.*] *иҫк. кит.* Таяныс, терәк, таянырлыҡ һәм ышанырлыҡ нәмә. *Ғөмдә, инсафлы шәкерт «Тормош»та эшләй, сәркәтип. Ҡаш төҙәтәм тип, күҙ сыгарып, барса эште таркатып.* Ш. Бабич.

**ҒӨМҮМ** [*ғәр.*] *с. кар.* **дөйөм 4.** *Туҙҙырҙым гөмүм мөлкәтте, әйтеп булмай — мин гәйепле.* Ш. Бикҡол.

**ҒӨМҮМИ** [*ғәр.*] *с. кар.* **дөйөм 4.** *Ғөмүми йыйылыш. Ғөмүми укыу.*

**ҒӨМҮМИЛӘШЕҮ** *к. кар.* **дөйөмләшеү.**

**ҒӨМҮМӘН** [*ғәр.*] *р. инш.* Йомғаҡлап төп бер фекергә килгәндә аңлата: дөйөм алғанда, йомғаҡлап әйткәндә. *Ғөмүмән алганда. Ғөмүмән әйткәндә.* ■ *[Секретарь:] Мин, гөмүмән, укырга каршы түгелмен, ә хәҙергә эшлейек әле.* Б. Бикбай. *Ғөмүмән, халыктың яманды, ялганды, куркакты түгел, ә якшыны, хаклыкты һәм батырлыкты данлау гәҙәтенә мин тәрән хөрмәт менән карайым.* З. Биишева.

**ҒӨМӘЛӘТ** [*ғәр.*] *и. иҫк. кит.* **1.** Яҡшы эш өсөн бирелгән өҫтәмә хаҡ; бүләк.

**2.** *күсм.* Орден, миҙал. *Шундагы батырлыгы өсөн Пётр батшаның уга [Арыҫланга] үҙ кулы менән каһарманлык гөмәләте такканын Килмәк якшы белә.* Ғ. Ибраһимов.

**ҒӨРБӘТ** [*ғәр.*] *и. иҫк.* **1.** Ят ер, сит ил. *Ғөрбәттә йөрөү.*

**2.** Сит илдәге яңғыҙ тормош, ситтәге яңғыҙлыҡ. *Һугыш, фиркәт, гишык, гөрбәт вә тормош кайгыһы шунда .. йыйылган яналар эстә.* Д. Юлтый.

● *Ғөрбәттә ташка ятмаган өйҙә яҫтык кәҙерен белмәҫ.* Әйтем.

**ҒӨРИФТАР** [*ғәр.*] *и. иҫк. һөйл.* Йәшәргә мәжбүр. *«Һеҙки Орски калаһында тормошка гөрифтар булып йәшәүсе Зариф кустыга беҙ ки Гөбөрлө ауылында гөрифтар булып тороусы Олонбикә еңгәндән куптин-куп сәләм.* Ғ. Ғүмәр.

**ҒӨРӨФ** [*ғәр.*] *и.* Тарихи шарттарҙа барлыҡҡа килгән халыҡ тарафынан ҡабул ителеп, быуындан-быуынға күсә килә дөйөм ҡағиҙәгә әйләнгән тәртип, аң, ҡараш, зауыҡ һ. б.; йола. *Ғөрөф буйынса.* ■ *Кейәү булып кискә генә, кояш байыгас кына, барыу гөрөфө булгас, мин көндөң кис булганын түҙемһеҙлек менән көтөп йөрөнөм.* М. Буранғол.

**ҒӨРӨФ-ҒӘҘӘТ** *и. йыйн.* Дөйөм халыҡ тарафынан ҡабул ителеп, традицияға, ҡағиҙәгә әйләнгән ғөрөф һәм ғәҙәттәр. *Ғөрөф-гәҙәт буйынса.* ■ *Башкорт булыу өсөн уның һүҙен генә белеү етмәй, гөрөф-гәҙәтен, йолаһын белергә кәрәк.* С. Агиш.

**ҒӨРӨФ-ЙОЛА** *и. кар.* **ғөрөф-ғәҙәт.** *Халыктың гөрөф-йолаһы.*

**ҒӨРРӘ** *р. диал.* Бөтөнләй, шыпа.

**ҒӨРФИ** [*ғәр.*] *с.* Ғөрөфкә мөнәсәбәтле, йолаға бәйле. *Был халыктар араһындагы гөрфи, дини айырымлыктар шыпа бөткән, иктисади мәнфәгәттәр уларҙы бик нык берләштергән ине.* Ә. Ғафаров.

**ҒӨРӘББӘ** [*ғәр.*] *и. диал.* Нимәнеңдер иң бәләкәй ҡалдығы, бер бөртөк нәмә; осмот. *Ғөрәббәһен дә калдырмау.*

**ҒӨСӨЛ** [*ғәр.*] *и. иҫк.* Ҡойоноу, йыуыныу йолаһы. **Ғөсөл бүлмәһе** *кар.* **ғөсөлхана. Ғөсөл ҡойоноу** ғөсөлләнеү. *Дини мәктәп, уның кар өҫтөндә көнөнә биш тапкыр тәһәрәт алыу, боҙ өҫтөндә гөсөл койоноу һәм мәжбүри намаҙ кеүек кәбәхәтлектәре минең алты йыл гүмеремде һәләк итте.* Б. Ишемғол.

**ҒӨСӨЛЛӘНЕҮ** *к. иҫк.* Дини байрам алдынан, енси мөнәсәбәттән һуң йыуыныу, ҡойоноу.

**ҒӨСӨЛХАНА** [*ғәр. + фарс.*] *и. иҫк.* Ҡойоноу, йыуыныу бүлмәһе. *[Хәҙрәт — Балтачёвка:] Бар, гөсөлханага инеп, һалкын һыу менән койон да, ятып йокла.* С. Агиш.

**ҒӨҪӨР** *и. кар.* **ҡоһор.** *Ғөҫөрө төшөү.* ■ *Һеҙ белмәйһегеҙ, балалар. Нужа күреүҙең дә гөҫөрө төштө инде уга [Әминә апайга].* Н. Мусин.

**ҒӨШӨР** [*ғәр.*] *и. иҫк.* Дини йола буйынса, йыйылған иген, малдың мулла-монтағайға саҙаҡа итеп бирелә торған ундан бер өлөшө. *Ғөшөр саҙакаһы. Ғөшөр алыу. Ғөшөр биреү.* ■ *[Хөсби:] Атаһы, хоҙай биргән икән, бының [бойҙайҙың] гөшөрөн Тәүкәй муллага тулыһы менән бирербеҙ инде.* Т. Йәнәби.

**ҒУЖ** *и.* Күп ашаусы, туя белмәҫ, мәскәй; бирән, убыр. *Ғуж булыу.. Ғуж урынына ашау. Ғуж тарыганмы ни, ашап туя алмай.* ■ *Беҙ бында кан коябыҙ, илдә халык ас-ялангас йәшәй, ә байҙар гуж урынына ашап корһак кабарта.* В. Исхаҡов.

**ҒУЖ-УБЫР** *и.* Үтә нык убыр. *[Орлов:] Йыуан әҙәм заты гуж-убыр була.* С. Кулибай.

**ҒУЗМА** [*гәр.*] *с. иҫк.* Бик бөйөк, ололоҡло (ҡатын-ҡыҙға ҡарата). *Батшабикә анағыҙ, ғузма тигән Аннабыҙ, артығы юҡ башҡанан, ғәйре-ғәйре батшанан.* Ҡонҡас сәсән.

**ҒУЙ** *киҫ. диал.* Төп фекерҙе көсәйтеү өсөн ҡулланыла. *[Алтынбикә:] Беҙҙә уға тиң булырлыҡ егет табылмаҫ ғуй.* М. Тажи.

**ҒУНСА** [*фарс.*] *и. иҫк.* Асылып етмәгән сәскә; сәскә бөрөһө. *Был гөлдөң ғунсаһы шәрҡ уйламайынса, бәнең күңелем был гөлдек ғунса улмаҫ.* М. Өмөтбаев.

**ҒУРШ** *оҡш.* Весән сапҡанда, ат үлән ашағанда сыҡҡан тауышты белдергән һүҙ. *Ғурш итеү.*

**ҒУРШ-ҒУРШ** *оҡш.* Ҡабат-ҡабат ғурш иткән тауышты белдергән һүҙ. *Ғурш-ғурш итеү. Ғурш-ғурш килеү.*

**ҒУРШЫЛДАТЫУ** *ҡ.* Ғурш-ғурш иттереү, ғурш-ғурш килтереү. *Ағас араларындағы аттарҙың ғуршылдатып үлән сәйнәгәне ишетелә.* Һ. Дәүләтшина.

**ҒУРШЫЛДАУ** *ҡ.* Ғурш-ғурш итеү, ғурш-ғурш килеү. *Ҡола ат ҡапыл тертелдәп, ғуршылдап, тыбырсынып бер урында туҡтап ҡалды.* С. Кулибай.

**ҒҮМЕР** [*гәр.*] *и.* **1.** Кеше, йәнлек һәм үҫемлектәрҙең барлыҡҡа килгәндән алып үлгәнгә тиклем булған физиологик хәле, тереклек иткән, йәшәгән ваҡыты. *Оҙон ғүмер. Ҡыҫҡа ғүмер. Кеше ғүмере. Ғүмер буйы. Ғүмер юлы. Ғүмер кисереү. Оҙон ғүмер теләү.* ■ *Ике көн, ике төн Әүхәҙиҙең ғүмере ҡыл өҫтөндә булды. Сәрби апай .. күҙ йәш йоммайынса ҡартын һаҡлап сыҡты.* Д. Исламов. *Үтеп кенә барған был ғүмерҙе үткәрмәҫкә сара бармы икән* (Халыҡ йырынан). *Һине гөлгә тиңәр инем, гөлдәр ғүмере әҙ генә* (Халыҡ йырынан). /Терелек хәле; йәшәү, тормош. *Ғүмер үткәреү.* ■ *Беҙҙең ғүмер әрәм үтмәһен! Бөгөнгө көн беҙгә йөкмәтә иң ҙур ауыр, шанлы талабын.* Ғ. Амантай.— *Ярай инде улай булғас, матур ғүмер теләйем,— тинем [мин].* Т. Йәнәби.

**2.** Йәшәгән осорҙоң бер дәүере. *Йәш ғүмер. Ҡартлыҡ ғүмере.* ■ .. *Ир ғүмере — бөркөттөң бер ҡанат ҡағыуы ул.* Ә. Вахитов. *Төн уртаһы еткәс, бер ҡыҙ илай, йәш ғүмерем заяға үтә, тип* (Халыҡ йырынан).

**3.** Билдәле бер ваҡыт араһы, ваҡыттың бер өлөшө; ваҡыт. *Беҙ килгәнгә әллә ни хәтле ғүмер үтте.* ■ *Юлдашым — Байрамғол совхозының шоферы. Һөт ташый. Бөтә ғүмерен Белорет менән совхоз араһындағы Урал юлында үткәрә.* М. Хәйҙәров. *Күп кенә ғүмер ул [Рәшиҙә әбей] балалар янына килә алманы.* К. Мәргән.

□ **Ғүмер итеү** (*йәки* **һөрөү**) тереклек итеү, йәшәү, тормош көтөү. .. *Урман буйҙарын яңғыратҡан меҙ төрлө ҡоштар, яҙ, йәй буйы ғына ғүмер итә торған төрлө ҡоштарҙың береүһе лә ҡалмаған.* Ғ. Дәүләтшин. *Килер көндәр беҙҙең балалар рәхәт-рәхәт ғүмер һөрөрҙәр.* Х. Ҡунаҡбай.

♦ **Ғүмер баҡый** ғүмер буйы, һәр ваҡыт. *Һис туҡтамай, ғүмер баҡый шулай саба заман аты.* М. Кәрим. **Ғүмер бөтөү** (*йәки* **өҙөлөү**) үлеү. *[Хан] афәт килде, ғүмер бөттө тигәндәрҙе берәм-берәм бөтәһен дә орошоп сыҡты.* «Бабсаҡ менән Күсәк». **Ғүмер эсендә бер** әллә ниҙә бер, берҙән-бер тапҡыр. *Ғүмер эсендә бер сәйәхәткә сығыу.* ■ *Ғәйшә, .. ғүмере эсендә бер күргән был кешенең киң күкрәгенә башын ҡуйып, өндәшмәй шымтайып ҡалды.* Һ. Дәүләтшина. **Минән дә үтте ғүмер, эттән дә үтте** бер ҙә рәхәт күрмәй, заяға үткән ғүмергә үкенеп әйтелгән һүҙ. **Ни ғүмерҙән бнре йәки ни ғүмер** бик оҙаҡ. **Үҙе бер ғүмер** ниндәйҙер бер хәл, ваҡиға һ. б. менән ныҡ ҡәнәғәт булыуҙы белдереп әйтелә.— *Һине бер ҡыуандырыу үҙе бер ғүмер бит ул миңә,— тип яуап бирә Өйрәнсек.* З. Биишева. **[Үҙ] ғүмерендә** (*йәки* **ғүмеренә**) бер ваҡытта ла, һис ваҡыт; ғүмере, ғүмерҙә. *Байғужаның уйламағандан теле асылды. Ғүмерендә һүҙ башлап һөйләмәгән кеше бөгөн һүҙ башланы.* Д. Юлтый. *[Йөҙөкәс:] Ул [ҡайным] үҙ ғүмеренә байый алмаһа ла, мал тип хәлдән тая.* Һ. Дәүләтшина. **Әллә бар ғүмер, әллә юҡ ғүмер** берәр ниәт, теләкте хуплап әйтелә. *[Гөлбоҫтан:] Ошондай мәлдәрҙә лә һайрашып, гөрләшеп ҡалмаһаң, донъяның ҡыҙыған ҡасан күрәһең? Әллә бар ғүмер, әллә юҡ ғүмер. Үлһәң-нитһәң, ана-а-а донъя!* Ғ. Дәүләтшин.

● *Кешегә үлем теләгәнсә, үҙеңә ғүмер телә.* Әйтем. *Ғүмер оҙаҡ, йыл йыраҡ.* Әйтем. *Үткән ғүмер — аҡҡан һыу.* Әйтем. *Эш менән үткән ғүмер — алтын ғүмер.* Әйтем.

**ҒҮМЕРГӘ** *р.* **1.** Һәр ваҡыт. *Бар ғүмергә. Ғүмергә шулай.* ■ *Мин даһи! Йөрөмәм үҙемде кәм тотоп,.. бар ғүмергә ут тотоп та ҡан йотоп.* Ш. Бабич.

**2.** Бер ваҡытта ла, һис ҡасан. *[Айбулат:] Ҡотлояр ағай менән беҙ ғүмергә талашҡаныбыҙ юҡ.* Һ. Дәүләтшина. *Лос-лос тигән немец һүҙен онотмамын ғүмергә* [Бәйеттән].

**ҒҮМЕР-ҒҮМЕРГӘ** *р.* Һәр ваҡыт; гел. *Бирьяҡ баҫыуҙа ғүмер-ғүмергә яҙғы эштәр шулай ике-өс көнгә һуңыраҡ бөтә инде.* Б. Бикбай.

**ҒҮМЕРҘӘ** *р.* Бер ваҡытта ла, һис ваҡыт; ғүмере. *Ғүмерҙә булмаған хәл.* ■ *Ғүмерҙә булмаған хәл, ир менән ҡатын ошо турала кистән бик ҡаты һүҙгә килеште.* Б. Бикбай. *Бындай күлдәкте мин ғүмерҙә кейгәнем юҡ ине, рәхмәт, килен! — тип ҡайныһы шатланған* (Әкиәттән). *Ғүмерҙә ташламам тигән һүҙҙәреңде онотма* (Халыҡ йырынан).

**ҒҮМЕРЕ** *р.* Бер ваҡытта ла, һис ҡасан; ғүмерҙә. *Шул тиклем яҡты моң күп булған уның [егеттең] йырында, хатта .. ғүмере көлмәгән кешеләр көлгән.* Ә. Вахитов.

**ҒҮМЕРЕНӘ** *р. ҡар.* **ғүмергә.** *Беҙгә ул ғүмеренә килгәне юҡ.* ■ *[Яланбикә:] — Әй, уның [Гөлйөҙөмдөң] ғүмеренә ҡылығы шул инде, юҡҡа ояла ла ҡала.* Һ. Дәүләтшина.

**ҒҮМЕРЛЕ** *с.* Оҙон ғүмергә эйә, ғүмере оҙаҡ. *Оҙон ғүмерле булыу.* ■ *Кинйә улдары Шәрәф тыуҙы, шул ғына ғүмерле булды.* Б. Бикбай.

**ҒҮМЕРЛЕК** *с.* Ғүмер буйына барған, һуҙылған; мәңгелек. *Ғүмерлек дуҫ. Ғүмерлек хәсрәт.* ■ *Ғүмерлек юлдаш, ҡайғы-хәсрәт ваҡыттарында мондаш, ҙур эш ваҡыттарында серҙәш булырлыҡ тәрбиәле, яҡшы холоҡло, ғилемле лә булған ҡыҙҙы алыу өсөн тырышырға ла, күп тәрбиә һәм ғилемгә эйә булырға ла кәрәк.* М. Ғафури. *1775 йылдың октябрендә Салауат атаһы*

*Юлай менән бергә Рогервикка гүмерлек каторгага ебәрелә.* «Башҡорт поэзияһы», 1953.

● *Аманатка итһәң хыянат, алырһың гүмерлек яманат.* Әйтем.

**ҒҮМЕРҺЕҘ** *с.* Ҡыҫҡа ғүмерле, әҙ ғүмерле. *Ғүмерһеҙ булыу.*

**ҒЫЖ** *окш.* Ҡурай тартҡанда һ. б. тамаҡ төбөнән ҡыҫылып сыҡҡан ҡалын тауышты белдергән һүҙ. *Ғыж итеү.*

**ҒЫЖ-ҒЫЖ** *окш.* Ҡабат-ҡабат ғыж иткән тауышты белдергән һүҙ. *Ғыж-гыж итеү. Ғыж-гыж килеү. Ғыж-гыж курай тартыу.* ■ *Ҡатындың төҫтәре агарган, .. һулыштары ҡыҫылган. Ғыж-гыж килә.* Д. Юлтый. *Һаба-һаба кымыҙы, гыж-гыж килгән курайы .., йыр йырлаткан Урал тау* (Ҡобайырҙан).

**ҒЫЖҒЫЛДАУ** *к.* Ғыж-ғыж итеү. *Ғыжгылдап көлөү.*

**ҒЫЖЛАТЫУ** *к.* Ғыж иттереү. *Тамакты гыжлатыу.* ■ *[Салгы] менән бер һелтәһәң — үләндәрҙе гыжлатып киҫә лә һала.* Р. Низамов.

**ҒЫЖЛАУ** *к.* Ғыж итеү. *Әллә артык тулкынланыуҙан .. берәү гыжлап, өҙөп-өҙөп тын ала.* Ә. Вахитов.

**ҒЫЖТ** *окш.* Ҡатыраҡ нәмәне ҡапыл ҡырҡҡанда, бысҡанда сыҡҡан тауышты белдергән һүҙ. *Ғыжт итеү. Ғыжт итеп калыу.*

**ҒЫЖТ-ҒЫЖТ** *окш.* Ҡабат-ҡабат ғыжт иткән тауышты белдергән һүҙ. *Салгыларҙың гыжт-гыжт-гыжт иткәне асык ишетелеп тора.* Ә. Вәли.

**ҒЫЖЫЛДАТЫУ** *к.* Ғыж-ғыж иттереү. *Әбүзәр курай көпшәһенең ике як осон тигеҙләп кабыргаһына тишектәр яһаны ла, гыжылдата уйнап та ебәрҙе.* Я. Хамматов.

**ҒЫЖЫЛДАУ** *к.* Ғыж итеү. *Ғыжылдап тын алыу.* ■ *Әхмәҙулла карт гыжылдай-гыжылдай рәхәтләнеп кеткелдәне..* Д. Исламов. *Паровоз мейесе кеүек гыжылдап тора үпкәм.* Т. Арслан.

**ҒЫЖЫЛДАУЫҠ** *с.* Ғыжылдап сыға торғаи, ғыжылдап торған. *Ғыжылдауык тауыш.* ■ *Насиптың тауышы гүмер бакый гыжылдауык булды. Бәләкәй сакта яңылыш мәкегә төшкәйне, шунан карлыгып калды тамагы.* М. Кәрим.

**ҒЫЖЫМ** [1] *и. һөйл. кәмһ.* Ғыж-ғыж итеп, гел йүткереп йөрөгән кеше; ҡара үпкә. *Кит, шул гыжымды.*

**ҒЫЖЫМ** [2] *с. диал. кар.* **бүртмәс** [1]. *Ғыжым шәл. Ғыжым яулык.*

**ҒЫЗЛАУ** *к.* Әсеп, бызырлау. *Бал гызлап ултыра. Эркет гызлап ултыра.*

**ҒЫНА** *к. кар.* **кына** [3].

**ҒЫР** *окш.* Тамаҡ төбөнән ҡалтырап сыҡҡан ҡалын тауышты белдергән һүҙ. *Ғыр итеү.* ■ *.. Был бай бер караңгы бүлмәлә .. гыр килә, ти, үлмәгә.* Д. Юлтый.

**ҒЫР-ҒЫР** *окш.* Ҡабат-ҡабат ғыр иткән тауышты белдергәи һүҙ. *Ғыр-гыр итеү. Ғыр-гыр килеү.* ■ *Әбей менән бабай гыр-гыр йоклай, яндарында бер бәпес һикереп-төшөп уйнай* (Әкиәттән).

**ҒЫРЛАУ** *к.* Ғыр-ғыр итеү, ғыр итеү. *[Мазһар] арты менән әйләнде лә әллә ысынлап, әллә юрый гырлап йокога китте.* С. Агиш.

**ҒЫРЛАУЫҠ** *и. диал.* Боғарлаҡ.

**ҒЫРШ** *окш.* Ҡатыраҡ нәмәне ҡырҡҡанда, өҙә тешләгәндә сыҡҡан тауышты белдергән һүҙ. *Айыу тештәрен уның [Ғәйзулланың] кабыргаһына батыра. Шул сак кукрәгенең кайһылыр ере гырш итеп кала.* Т. Сәғитов.

**ҒЫРШ-ҒЫРШ** *окш.* Ҡабат-ҡабат ғырш иткән тауышты белдергән һүҙ.

**ҒЫРШЛАТЫУ** *к.* Ғырш иттереү. *Ғыршлатып сәйнәү.* ■ *Төнләүктән һыйырҙың бесәнде мороно менән айкауы, шунан гыршлатып көйшәй башлауы ап-асык ишетелде.* Р. Низамов.

**ҒЫРШЫЛДАТЫУ** *к.* Ғырш-ғырш иттереү. *Ғыршылдатып сәйнәү.* ■ *Таһир олатай шыңгыратып салгыһын янай ҙа һутлы үләндәрҙе гыршылдатып сабырга тотона.* Й. Солтанов. *Ғыршылдатып бесән саптым бергә апайҙарым менән болонда.* Ғ. Дәүләтов.

**ҒЫРШЫЛДАУ** *к.* Ғырш-ғырш итеү, ғырш-ғырш килеү. *Ғыршылдап тороу.* ■ *Төрлө кош-тар һайрауы, салгылар сыңлауы, кыркылган үләндәрҙең гыршылдауы, кайҙалыр колондар кешнәүе бергә кушылып, экиәт моңдарына әйләнделәр.* Б. Викбай.

**ҒЫРЫЛДАТЫУ** *к.* Ғыр-ғыр нттереү, ғыр-ғыр килтереү. *Тамакты гырылдатыу.*

**ҒЫРЫЛДАУ** *к.* Ғыр-ғыр итеү, ғыр-ғыр килеү. *Ғырылдап сыккан тауыш.* ■ *Уның [Ҡаҙанбаевтың] тауышы асыуланыуҙан гырылдап сыкты.* Н. Мусин. *Ҡуй көтөүенең өс көтөүсеһе гырылдап йоклап ята, ти* (Әкиәттән).

**ҒЫРЫЛДАУЫҠ** *и. диал.* Боғарлаҡ.

**ҒЫРЫЛДЫҠ** *с.* **1.** Ғыр-ғыр иткән, ғырылдап сыҡҡан. *Ғырылдык тауыш.* ■ *Хафиз бер ҙә үҙенекенә окшамаган гырылдык бер тауыш менән: — Ҡана, кайынбикә, бер ижау һалкын һыу бир әле,— тине.* М. Тажи.

**2.** *и. мәг.* Үлер алдынан тын алыу тукталғанға тиклем ғырылдап сыҡҡан тауыш. **Ғырылдыҡ инеү** тын алыу тукталыр алдынан ауыр итеп ғырылдай башлау. *Ғырылдык ингән, оҙак тормаҫ.*

**ҒЫШТ-ҒЫШТ** *окш. кар.* **ғырш-ғырш.** *Ғышт-гышт итеү. Ғышт-гышт килеү.* ■ *Ғышт-гышт килтереп салгы үләндәрҙе киҫә. Әсәйем тирләгән, бешкән, янган.* Р. Низамов.

**ҒӘБЕТ** [*гәр.*] *и. кар.* **ғәбит.**

♦ **Беҙ ғәбеттәр** *дини* беҙ ҡолдар, алла бәндәләре (түбәнселек менән үҙең тураһында әйткәндә ҡулланыла). *Донъяла һәр нәмә тәклидтән гибәрәттер, тинем; хатта тәклид беҙ гәбеттәргә гибәҙәттер тинем.* Ш. Бабич.

**ҒӘБИ** [*гәр.*] *с. иҫк. кит.* Аңра, иаҙан. *Улар [мәзин менән хәлфә] миңә карап бер аҙ һөйләшеп алдылар. «Жаһил»,— тине Хөббихужа. «Жаһил, гәби»,— тине Йыһангир.* Ғ. Ғүмәр.

**ҒӘБИТ** [*гәр.*] *и.* **1.** *иҫк.* Ҡол, бәндә, хеҙмәтсе. *Егеттәр бер гәбит егеткә осрайҙар. Ғәбит егет һорай, был егеттәр һөйләй* (Әкиәттәи).

**2.** *(баш хәреф менән)* Ир-ат исеме.

**ҒӘДЛИӘ** [*гәр.*] *и. иҫк. кит.* Юстиция. *Ғәдлиә халык комиссарлыгы.* ■ *1919 йылдың сентябрендә Башкортостан революцион комитетының карары менән Башкортостан АССР йөмһүриәтендә гәдлиә органдары төҙөүгә нигеҙ һалынды.* «Совет Башҡортостаның ун йылы», 1929.

**ҒӘДӘМ** [*ғәр.*] *и. иҫк.* Юҡ булыу, юҡлыҡ. *Донъяның тәбиғәте үҙгәрелмәҫ, бер ваҡытта булмаҫ уға ғәдәм тарыу.* М. Ғафури.

**ҒӘҘҒӘМБӘР** *и. иҫк.* Ниндәйҙер бер аҫыл таш. *Батыр Бабсаҡ бер ҙур тауға еткән шунда, ғәҙғәмбәр, алтын, көмөш, гәүһәр, яҡут, төрлө-төрлө аҫыл таштар бары шунда.* «Бабсаҡ менән Күсәк».

**ҒӘҘЕЛ** [*ғәр.*] *с.* **1.** Дөрөҫлөккә ярашлы, дөрөҫлөк яҡлы; дөрөҫ, хаҡ. *Ғәҙел закон. Ғәҙел кеше. Ғәҙел хөкөм. Ғәҙел хөкүмәт. Ғәҙел булыу.* ■ *Матур ҙа, батыр ҙа, ғәҙел дә егет булып үҫте Бураныша.* З. Биишева. *Ғәскәреңә әмер бирсе, хан, .. һинең һүҙҙән ғәҙел әмер юк, ҡурҡаҡ булһа, ханға кәҙер юк.* М. Кәрим. *Күңелемдә ниндәй хазина бар — барыһы менән ғәҙел бүлештем.* Ғ. Рамазаиов.

**2.** [*баш хәреф менән*] Ир-ат исеме.

● *Ғәскәр башы ғәҙел булһа, дошман аяҡ аҫтында.* Мәҡәл.

**ҒӘҘЕЛЛЕК** *и.* Дөрөҫлөк, хаҡлыҡ, хәҡиҡәт. — *Да, башҡорттар ғәҙеллек, ирек һөйөр тоғро халыҡ,— тине уйланып Иван Грязнов.* Ғ. Хөсәйенов. *Дөрөҫлөк, ғәҙеллек — беҙҙең юл.* Ҡ. Даяи.

**ҒӘҘЕЛЛЕКЛЕ** *с.* Дөрөҫлөккә ярашлы, дөрөҫлөк яҡлы; ғәҙел. *Ғәҙеллекле ҡарар. Ғәҙеллекле кеше. Ғеҙеллекле эш. Ғәҙеллекле хәл итеү.*

**ҒӘҘЕЛЛЕКҺЕҘ** *с.* Дөрөҫлөккә ярашһыҙ, дөрөҫлөккә ҡаршы; ғәҙелһеҙ. *Ғәҙеллекһеҙ кеше. Был эш бигерәк ғәҙеллекһеҙ килеп сыҡты.*

**ҒӘҘЕЛҺЕҘ** *с. кар.* **ғәҙеллекһеҙ.**

**ҒӘҘЕЛҺЕҘЛЕК** *и.* Дөрөҫлөккә ҡаршы килгән эш, дөрөҫлөккә ярашһыҙ эш йәки мөнәсәбәт. *Социаль ғәҙелһеҙлек.* ■ *Әгәр ҙә мин Бабичтың хеҙмәт һөйөүе, өлгөрлөгө, тынғыһыҙлығы һәм бер юлы .. әллә нисәмә төрлө ауыр йөк һөйрәп барырға һәләтле бер талант булыуы тураһында һөйләгән саҡта, тағы ла бер моментты әйтмәй үтһәм, был инде бөтөнләй ғәҙелһеҙлек булыр ине: Бабич 1915 йылда хосуси рәүештә уҡытыусылыҡ итте.* С. Ҡудаш.

**ҒӘҘИМГЕ** *с. кар.* **кәҙимге.** *[Хөсәйен:] Әйтәм бит, Ленин ғәҙимге бер кеше.* Һ. Дәүләтшина.

**ҒӘҘӘЛӘТ** [*ғәр.*] *и. иҫк. кит.* Ғәҙеллек, тоғролоҡ, хаҡлыҡ. *Эшсе теләй ғәҙәләт. Тигеҙһеҙлек — яманат.* Ш. Бабич. *Һинең илең — бөйөк ил, хаҡлыҡ иле, ғәҙәләттең сәскә атыусы ере.* М. Ғафури.

**ҒӘҘӘЛӘТЛЕ** *с. иҫк. кит.* Дөрөҫ, ғәҙел. *Ғәҙәләтле тормош майҙан алғас, беҙҙең йәндәребеҙ шатланды.* Х. Ғәбитов.

**ҒӘҘӘТ** [*ғәр.*] *и.* **1.** Кешенең тәбиғи һыҙатына әйләнгән сифат; характер үҙенсәлеге; ҡылыҡ. *Ғәҙәт буйынса. Ғәҙәткә индереү.* ■ *[Хафиз:] Һеҙ тағы ла мине мактана тип уйламағыҙ. Бына ҡәйенбикә минең ундай ғәҙәтем юҡлығын белә.* М. Тажи.— *Әллә мин ысынлап та көнләшәмме? — тип уйланы ул [Рахман]. Ҡайҙан килде миңә ул ғәҙәт.* Ә. Вәли.

**2.** Дөйөм халыҡ тарафынан ҡабул ителеп, ҡағиҙәгә әйләнгән, быуындан-быуынға күсә килгән аң-ҡараш, зауыҡ, тәртип; йола, ғөрөф. *Ғәҙәт буйынса. Ғәҙәт булыу. Ғәҙәткә әйләнеү.* ■ *[Председатель:] Тимер ҡустым, .. ҡырҙан ҡайтҡан кешене бер саҡырып алыу ғәҙәт тә бит, ҡул теймәй.* Б. Бикбай. *Беҙҙең яҡта шундай ғәҙәт бар — беренсе күкрәүҙе ишетеү менән ерғә ятып аунайҙар. Имеш, урак урғанда билең һыҙламаҫ. .. Ата-бабанан ҡалған йола..* И. Абдуллин. *[Башҡортостан]... Яңы һиндә юлдар, йырҙар, яңы һиндә ғәҙәттәр ҙә, һине күреп һоклаиалар француздар ҙа, ғәрәптәр ҙә.* Ғ. Рамазаиов.

**3.** Йәмғиәттең, халыҡтың тормош-көнкүрешенә инеп урынлашҡан, һәр саҡ ҡабатлана торған тәртип; ғөрөф. *Ғәҙәт буйынса. Ғәҙәткә индереү.*— ■ *Ырымбурҙан сигенгән Дутов отрядтары береһе лә таралмайынса, иҫке ғәҙәт менән .. ауылдарҙы талап йөрөй башланылар.* З. Шәрҡи.— *Сафҡа теҙелергә! Өйрәнелгән ғәҙәт буйынса ҡыҙыл армеецтар күҙ асып йомғанса урындарына баҫтылар.* Я. Вәлиев.

□ **Ғәҙәт итеү** ғәҙәтләнеү, ғәҙәткә индереү, ғәҙәткә әйләндереү. *Ғәҙәт итеп алыу.* ■ *Бик күптән үк изге ғәҙәт иткән үҙ ерендә минең башҡортом, уртаҡлашып, бергә үткәрергә туғандарҙың ҡайғы, шатлығын.* С. Ҡудаш.

◆ **Ғәҙәттән тыш** 1) кәҙимгесә түгел, һирәк осрай торған. *Ғәҙәттән тыш хәл.* ■ *Уның [Әхмүштең] ғәҙәттән тыш асыулы йөҙөн күреп, Хафиза еңгә аптырап китте, ни әйтергә белмәне.* Д. Юлтый; 2) бик, үтә, ныҡ. *Көн ғәҙәттән тыш саҫҡау булғанлыҡтан, мин өшөп ҡайтып индем.* С. Кулибай.

● *Алтылағы ғәҙәт алтмышта.* Әйтем. *Сәғәтең менән маҡтанма, ғәҙәтең менән маҡтан.* Әйтем. *Яҡшынан яҡшы тыйыуы — ғәҙәт, яҡшынан яман тыйыуы — ғәжәп.* Әйтем.

**ҒӘҘӘТЕНСӘ** *р.* Ғәҙәт[е] буйынса. *Һөнәрсе, ғәҙәтенсә алды-ялды белмәй эшләүен дауам итә.* З. Биишева. *Берҙән-бер көндө был [егет], ғәҙәтенсә иртә тандан тороп, һунарға киткән, ти* (Әкиәттән).

**ҒӘҘӘТИ** *с.* Тормошта һәр ваҡыт була торған, ғәҙәткә ингән; ябай, ғәҙәттәге. *Ғәҙәти хәл. Ғәҙәти тормош. Ғәҙәти нәмә.* ■ *Ә бөтәһе ине ғәҙәти, бөтәһе лә ине һуғышса: янған Берлин, ҡорал өйөмө — һуғыштарҙа булған тормошса.* Н. Нәжми.

**ҒӘҘӘТ-ЙОЛА** *и. йыйн.* Ғәҙәт һәм йолалар. *Ғәҙәт-йола буйынса.* ■ *Новалихин башҡорт түрәләренә күп ҡатнашҡан. Күп мәжлестә булған. Был аймаҡтың бөтә ғәҙәт-йолаһын белә.* Т. Хәйбуллин.

**ҒӘҘӘТЛЕ** *с.* Холҡо, ғәҙәте яҡшы. *Яҡшы ғәҙәтле кеше. Ғәҙәтле булыу.*

● *Ир ғәҙәтле булһа, ҡатын ғәйрәтле була.* Әйтем.

**ҒӘҘӘТЛӘНДЕРЕҮ** *к.* Ғәҙәткә индереү. *Балаңы ваҡытында йоҡларға ғәҙәтләндерергә кәрәк.*

**ҒӘҘӘТЛӘНЕЛЕҮ** *к. эйһ. ф. кар.* **ғәҙәтләнеү.** *Иртә тороп ғәҙәтләнелгән. Йәй көнө көн дә һыу инеп ғәҙәтләнелде.*

**ҒӘҘӘТЛӘНЕҮ** *к.* Ғәҙәт итеп алыу; өйрәнеү. *Гимнастика яһарға ғәҙәтләнеү. Ғәҙәтләнеп китеү. Ғәҙәтләнгән эш.* ■ *Айбулат.. көтөүселек ғүмерендә малын үрешкә ебәргәндә һәр ваҡыт моңло йырлап көн күреп ғәҙәтләнгән..* Һ. Дәү-

лэтшина. *Пионерҙар һәр байрамды хеҙмәт уңыштары менән каршыларга гәҙәтләнгән.* Ш. Бикколов.

**ҒӘҘӘТСӘ** *р.* **1.** Ғәҙәттәгесә, һәр вакыттағыса. *Ғәҙәтсә кейенеү.* ■ *Куҙ карашкайҙары гәҙәтсә, һөйләшеүкәйҙәре гәрәпсә* (Халык йырынан).

**2.** Йола буйынса, ғәҙәт буйынса. *Ашка ултырҙылар. Тәүҙә гәҙәтсә табынга каҙы-ял, ит куйылды.* Б. Бикбай.

**ҒӘҘӘТТӘ** *р.* **1.** Кәҙимге тормошта, кағиҙә буларак, күп вакыт. *Ғәҙәттә эт аҫрамаган һунарсы һирәк була.* С. Кулибай.

**2.** Һәр вакыт. *Палатка артында поход кухняһы... Ғәҙәттә һалдаттарҙа була торган шау-шыуҙар юк.* Д. Юлтый.

**ҒӘҘӘТТӘГЕ** *с.* Һәр вакыт була торған, һәр вакыттағы. *Ғәҙәттәге күренеш. Ғәҙәттәге тәртип. Ғәҙәттәге хәл.* ■ *Петроград гәҙәттәге үҙенең дымлы күк томанына уранган.* Һ. Дәүләтшина.

**ҒӘҘӘТТӘГЕСӘ** *р.* Һәр вакыттағыса. *Ғәҙәттәгесә кейенеү.* ■ *Һөнәрсе гәҙәттәгесә яныпярһып көршәктәр яһай.* З. Биишева.

**ҒӘҘӘТҺЕҘ** *с.* Насар холокло, кылыкһыҙ.
● *Ғәҙәтһеҙ кеше — әҙәпһеҙ кеше.* Әйтем.

**ҒӘҘӘТҺЕҘЛӘНЕҮ** *к.* Ғәҙәтһеҙгә әйләнеү, ғәҙәтһеҙ булыу; холокһоҙ кыланыу. *Ғәҙәтһеҙләнеп барыу. Ғәҙәтһеҙләнеп китеү.*

**ҒӘЖЛӘ** [*гәр.*] *р. иҫк. кит.* Ашығыс, кабалан. *Аның өсөн гәжлә кылдым бән васыят, хоҙай биргән ине, тип изге ниәт.* М. Өмөтбаев.

**ҒӘЖҮЗ** [*гәр.*] *и. иҫк.* Картайған, какшаған кеше; карт. *Ғәжүздәрҙең сәстәренең агы хакына, йәтимдәрҙең күҙ йәштәре хөрмәтенә был залаләт фетнәһенән вә нәфсе шайтанының мәкеренән хифыз вә мәсун әйлә.* М. Өмөтбаев.

**ҒӘЖӘИП** [*гәр.*] *с.* Иҫ китерлек, таң калырлык; гәжәп. *Ғәжәип кеше. Ғәжәип күренеш. Ғәжәип тәбигәт.* ■ *Кыҫка гүмерҙә кешеләр менән татыу торһаң, улар менән асыуланышмаһаң, гәжәип дәрәжәлә якшы буласак.* Ғ. Хәйри. *Күҙҙәреңдән әллә ниндәй гәжәип бер нур ага.* К. Даян.

**ҒӘЖӘП** [*гәр.*] *с.* **1.** Иҫ киткес, таң калырлык, аптырарлык. *Ғәжәп кеше. Ғәжәп хәл.* ■ *— Тома һукырмын, балам. — Күҙле кешенән дә яман күргән һымак та инде! — Һе-һе .. гәжәптер шул. Шул хәтлем тәжрибә лә алмагас ни хәжәтемә бит сая бер быуат ерҙә йәшәргә, ә?* М. Әбсәләмов. *Ғәжәп эш! Ер һелкетеп тор ҙа, бөтә миллкенде ташлап кара ер аҫтына керсәлең.* Т. Хәйбуллин. *Их, гәжәп көй — бер илай ҙа, бер көлә, һайрай-һайрай моңланып куккә менә.* Ш. Бабич. **Был [ни] гәжәп** ифык аптырағанда әйтелә. **Ғәжәп(кә) калыу** нык аптырау. *Тымыҙык кына, баҫалкы, йыуаш кына Байгужа тарафынан шундай бер эштең эшләнеүенә мин гәжәпкә калдым.* Д. Юлтый. *Әбей өйҙәге хәлде һөйләп биргәс, бабай тагы ла ныгырак гәжәпкә калган, ти* (Әкиәттән).

**2.** *р. мәг.* Бик, нык, үтә, сикһеҙ. *Ғәжәп акыллы. Ғәжәп матур. Ғәжәп якшы.* ■ *Ғәжәп тынгыһыҙ инде ул беҙҙең Тәнзилә.* Ә. Бикчәнтәев.

□ **Ғәжәп итеү** аптырау, иҫ китеү, ғәжәпләнеү. *Ғәжәп итеп тыңлау. Ғәжәп итеп карап тороу.* ■ *[Гөләйшә:] — Юк һугыш барганда ла, ошо тупрактың файҙаһын күрергә тырышмайбыҙ. Куй инде, акылга һалып уйлаһаң, гәжәп итерлек.* К. Кинйәбулатова.

**ҒӘЖӘПЛӘНДЕРЕҮ** *к.* Ғәжәпкә калдырыу, аптыратыу. *Бригадир үҙен гәжәпләндергән мәсьәләнең серенә төшөнә алманы. Сөнки йәш егеттең йөрәгендә булып яткан үҙгәрештәр билдәле түгел ине әле уга.* Б. Бикбай.

**ҒӘЖӘПЛӘНЕҮ** *к.* Ғәҙәттән тыш тип һанау, ғәжәп итеү, аптырау, хайран калыу. *Ғәжәпләнеп карап тороу.* ■ *Хан яңы алган хеҙмәтсеһенең шул тиклем көслө бер егет булыуын гәжәпләнеп һөйләне, ти* (Әкиәттән).

**ҒӘЖӘПҺЕНЕҮ** *к.* Ғәжәпкә һанау, ғәжәп һымак күреү. *Ғәжәпһенеп карау.* ■ *Билал улар-ҙың дружинаһы ак та, кыҙыл да булмауына гәжәпһенеп, барып күрергә риза булды.* А. Таһиров.

**ҒӘЖӘПҺЕНЕҮСЕ** *и.* Ғәжәпләнгән, аптыраған кеше. *Әҙәм балаһы нимә генә уйлап сыгармай! — тип гәжәпһенеүселәр ҙә бар. .. Пианиноның .. көй сыгарыуына ышанмаган төҫтә, шикләнеберәк караусылар ҙа бар.* Ш. Янбаев.

**ҒӘЗБЕ** [*гәр.*] *и. һөйл.* Асыу. *Ғәзбе килеү.* ▭ *— Һеҙ үҙ куләгәгеҙҙән үҙегеҙ куркаһыгыҙ,— тип өҫтәне [Саҙрый]. Был һүҙҙәр Рәхмәйҙең гәзбенә тәйҙе.* И. Ғиззәтуллин. *Шунда тәңре гәзбе илә: «Әй, эт!» — тине.* Ш. Бабич.

**ҒӘЗЕЛ** [*гәр.*] *иҫк.*: **гәзел итеү** (*йәки* **кылыу**) эш урынынан алыу, эштән сығарыу. *Батшалыктан Карганы гәзел дә кылмак булдылар.* М. Ғафури. **Ғәзел ителеү** (*йәки* **кылыныу**) эш урынынан алыныу, эштән сығарылыу. *Татищев гәзел кылыныл, еренә Урусов тәгәйен ителде.* М. Һадыев.

**ҒӘЗИЗ** [*гәр.*] *с.* **1.** Бик кәҙерле, иң якын, бер-ҙән-бер, аяулы. *Ғәзиз баш. Ғәзиз ер. Ғәзиз ил. Ғәзиз йән. Ғәзиз булыу.* ■ *[Булат:] Атай ҙа, әсәй ҙә бирәү генә була. Шуга ла уларҙы гәзиз тиҙәр бит.* К. Кинйәбулатова. *Бала гәзиз, уны алыштырмай аҫыл таш та, тау-тау алтын да.* Ш. Бикол.

**2.** *и. мәг. дини* Изге, изгеләр (7 мәғ.). *Ғәзиз булыу.* ■ *[Кәберҙә] бер зыярат ташы күрҙеләр. Ташка Чулка ата тип яҙылган. Хан әйтте, могайын, был гәзиз булыр имеш, тип.* «Башкорт шәжәрәләре», 1960.

**3.** (*баш хәреф менән*) Ир-ат исеме.

**ҒӘЗИМ** [*гәр*]. *с. иҫк. кит.* **1.** Бөйөк, дәрәжәле. *Был Сәйҙәш гәзим баһадир .. булды.* «Башкорт шәжәрәләре», 1960.

**2.** Нимәгәлер алып барыусы, шуға юл тотоусы. *[Куҙыйҙың] «инәй, минең һөйәркәм бармы, ул кайҙа, .. миңә әйт, тип йөҙәтәсәктәре инәһенә бер бәләгә гәзим булгайны.* «Куҙыйкүрпәс менән Маянһылыу».

**3.** (*баш хәреф менән*) Ир-ат исеме.

♦ **Валлаһи гәзим** һүҙҙе ныгытып, ышандырыр өсөн әйтелә. *[Агаһы — Майһарга:] .. Йәшенле ямгырҙа кырҙа йөрөһәң, сәс йәшен юлы һымак оҙон булып үҫә. Валлаһи гәзим!* К. Кинйәбулатова. *[Әптерәш:] Юк, Фәхри еңгә, валлаһи гәзим. Бына ант итеп әйтәм.* Х. Ибраһимов.

**ҒӘЗӘЛ** [1] [*гәр.*] *и.* Көнсығыш халыктарындағы

строфаһы күп ижекле ике юлдан торған лирик шиғыр үлсәме. *Ш. Бабич поэзияһында ғәзәлдәр күп.* ■ *Гётене көнсығыш поэзияһының, Хафиздың ғүзәл ғәзәлдәренең иң китмәле мөғжизәле серле көүәһе, тел төбө, аллегория, символ, кинәйә, купшы биҙәк менән йәшеренгән сихри көсө арбай.* Ғ. Хөсәйенов.

**ҒӘЗӘЛ** [2] *и. кар.* **йәйрән.**

**ҒӘЗӘЛСЕ** *и.* Ғәзәл яҙған һәм ғәзәл күсереү менән шөғөлләнгән шағир. *Науаи белешмәләренә ҡарағанда, .. китап сауҙаһында бигерәк тә махсус ғәзәлселәр ҙур уңышка ирешкән: уларҙан теләгән бер авторҙың .. ғәзәлен күсертеп алдырыу мөмкин булған.* Ә. Харисов.

**ҒӘЗӘУАТ** [*ғәр.*] *и. иҫк.* Барымта, яу. / Дин өсөн асылған һуғыш.

**ҒӘЙБӘТ** [*ғәр.*] *и.* Кешене артында яманлап, насарлап һөйләгән хәбәр; яман һүҙ. *Ғәйбәт һөйләү.* ■ *Ғәйбәт — иҫкелектең сире, ул йогошло, .. һаҡ бул! Юғары бул унан, пак бул!* Ҡ. Даян. *Дуҫлыҡ .. булғас, бик һәйбәт! Ләкин ҡасан матур, ҙур һәйбәтте аяҡ салып йыға бер ғәйбәт.* М. Кәрим. *Аҡыллы ла егет ай шул булыр, һөйләмәҫ ул кеше ғәйбәтен* (Халыҡ йырынан). **Ғәйбәт тоҡсайы** ғәйбәт һөйләү менән шөғөлләнгән кеше, ғәйбәтсе. *Ҡайҙа һуң унда [Фәхриҙә] атаһында булған ғорурлыҡ, көс? Тфү, бисә-сәсәләр араһына тығыла, ғәйбәт тоҡсайына әйләнгән.* Б. Бикбай. **Ғәйбәт һатыу** кешене насарлап һөйләү, кеше тураһында яман һүҙ таратыу. *Ғәйбәт һатып йөрөү.* ■ *[Аллаҡаев:] .. Ярай, һин Ҡәҙриә еңгәй, нимә унда ғәйбәт һатаһың?.. Нимә, кенә тотаһыңмы?..* С. Кулибай. *Бикә килен булып төшкәс тә татыу тормош оҙаҡ бармаңы, ғәҙәтенсә ҡарсыҡ ғәйбәт һатты, .. көн-төн ҡарғаны.* Т. Арслан.

● *Дуҫ күҙеңә ҡарап әйтер, дошман ғәйбәт һатыр.* Әйтем. *Кешелә күрһә — ғәйбәт, үҙе ҡылһа — һәйбәт.* Әйтем. *Яман әҙәм балаһы ғәйбәт һөйләп буш ҡалыр.* Әйтем.

**ҒӘЙБӘТСЕ** *и.* Ғәйбәт таратҡан, ғәйбәт һөйләү менән шөғөлләнгән кеше. *Ғәйбәтсе булыу. // Ғәйбәтсе кеше.* ■ *Ишектәнме, тишектәнме, йортҡа ғәйбәт килеп керә, .. хәйләкәрлек ауын үрә .. ғәйбәтсенең ағыуынан аҙмы әҙәм яфа сигә.* А. Игебаев. *Ғәйбәтсе телдәр ғәйбәтте төрлө яҡлап ҡабартты. Әҙәм ышанмаҫлыҡ һүҙҙәр шулай артты ла артты.* Т. Арслан.

● *Боҙ өҫтөндә яҙыу тормаҫ, ғәйбәтселә һүҙ тормаҫ.* Әйтем.

**ҒӘЙЕП** [1] [*ғәр.*] *и.* **1.** Килешмәгән, тәртипкә, әҙәпкә һыймаған эш-ҡылыҡ; яҙыҡ. *Ҙур ғәйеп. Ғәйеп күреү. Ғәйеп миндә. Ғәйеп табыу. Ғәйеп тағыу. Ғәйеп ташлау. Ғәйеп һанау. Минең ни ғәйебем бар. Ғәйепте асыу. Ғәйепте юйыу. Ғәйепте кешегә япһарыу. Ғәйепте үҙеңә алыу. // Ғәйеп эш. Ғәйеп һүҙ.* ■ *Бибинур иҫкәртеү яһа[ны]: Нимә, әллә һөйөү ғәйеп эшме йәшерергә? Мин бала түгел.* Б. Бикбай. *Минән түгел, ғәйеп арҡаһында йәшәй алмам мин дә әрнеүһеҙ.* Ғ. Хәйри.

**2.** Етешмәгән урын, кәмселек, етешһеҙлек. *Приказчиктар һәр ситсаны йыртҡан һайын: «Их, тауары!» — тип маҡтап ҡуялар. Алыусылар ниндәй ҙә булһа ғәйеп табып, яманларға тырышалар.* С. Агиш. *Был кәбәндә бер ғәйеп бар, һиҙһә кем дә шелтәләр: эреле-ваҡлы, башлы-башһыҙ булды ҡуйҙы көлтәләр.* Ш. Бабич.

□ **Ғәйеп итеү** килешмәгән, әҙәпкә, тәртипкә һыймаған эш, яҙыҡ тип ҡарау; ғәйепләү. *Ҡайғы күрһәң, ила, батыр, ғәйеп итмәҫ һине кем дә.* М. Кәрим.

◆ **Ғәйеп итештән булмаһын** *кар.* **биғәйбә 2. Ғәйеп итмәгеҙ** *әҙәп.* ғәфү үтенгәндә әйтелә. **Ғәйепкә тарттырыу** берәр яҙыҡ эш, ҡылған насар ҡылыҡ өсөн яуап бирҙереү; яуапҡа тарттырыу. *Уны [Мәмбәт ҡараҡты] күптән түгел һуғып үлтергәндәр. Шаулап йәшәһә лә шыпшым үлгән, уны үлтергән кешене эҙләүсе, ғәйепкә тарттырырға тырышыусы ла булманы.* Б. Бикбай. **Ғәйептән булған** никахһыҙ тыуған; тыума.

● *Белмәү ғәйеп түгел, белергә теләмәү ғәйеп.* Әйтем. *Бәреп әйткәндең ғәйебе юҡ.* Әйтем. *Ғәйебенә күрә яҙаһы.* Әйтем.

**ҒӘЙЕП** [2] [*ғәр.*] *с.* Йәшерен, билдәһеҙ, берәүгә лә билдәле түгел. *[Батыр:] Бына һис көтмәгән ерҙән хоҙай бирҙе. Электән дә ғәйеп хазиналы тиҙәр ине был ерҙе.* М. Ғафури.

□ **Ғәйеп булыу** эҙһеҙ, хәбәрһеҙ юҡ булыу; юғалыу. *Уның [Зәйнәптең] атаһы һуғыштың тәүге йылдарында уҡ фронтта ғәйеп булғайны.* Ш. Насыров.

◆ **Ғәйеп ирәндәр** *дини* серле ирҙәр, алла кешеләре. *[Хан:] Аллаға шөкөр, биргән саҙаҡа, салған ҡорбандар арҡаһында, ғәйеп ирәндәр ярҙамы менән балам ҡотолған* (Әкиәттән). **Ғәйептән хәбәр** иҫке хөрәфәт буйынса, тәңре йәки төрлө юрау, ырымдар арҡаһында белеп булған, алдағы киләсәк тураһындағы хәбәр. *Ғәйептән хәбәр биреү.* ■ *Хәким бай .. һәр ваҡыт доға уҡый, ураҙа тота, муллалар менән эш күрә. Шуның өҫтәүенә ғәйептән хәбәр биреү менән дә шөғөлләнә. Уға төрлө яҡтан ауырыу кешеләр килә.* Ш. Шәһәр.

**ҒӘЙЕПЛЕ** *с.* **1.** Насар, ярамаған эш ҡылған, ғәйебе булған, ғәйебе бар. *Ғәйепле кеше. Ғәйепһеҙҙән ғәйепле. Икеләтә ғәйепле. Үҙең ғәйепле. Ғәйепле булыу. Ғәйепле һанау.* ■ *Ныязғол үҙенең һуңғы ваҡыттарҙа күргән мәшәҡәт, яфаларының иң ҙур ғәйепле кешеһе Айбулат икәнен бик яҡшы төшөнә ине.* Һ. Дәүләтшина.

**2.** *юр.* Енәйәт эшләгән, енәйәт эш өсөн яуаплы булған. *Ғәйепле кеше. Ғәйепле булыу. Ғәйепле итеү. Ғәйепле һанау. Ғәйепле яһау. Ғәйепле түгел.* ■ *Саҡай Солтановты ун биш йылға хөкөм иттеләр. Суд ваҡытында ул, бүреләй стенаға һырлыҡтырылғас, Фәғиләнең һәләкәте өсөн дә үҙе ғәйепле булыуын таныны.* Б. Бикбай.

● *Урлаған бер ғәйепле, урлатҡан ике ғәйепле.* Мәҡәл.

**ҒӘЙЕПЛӘНЕҮ** *ҡ. төш. кар.* **ғәйепләү.** *1937 йылда Һәҙиә Дәүләтшина нахаҡҡа ғәйепләнеп, оҙаҡ йылдар буйы ижади хеҙмәтенән айырылырға мәжбүр була.* М. Минһажетдинов.

**ҒӘЙЕПЛӘНЕҮСЕ** *и. юр.* Берәй енәйәт эшләүҙә ғәйепләнелеп, суд алдында яуап биргән, ғәйепле тип һаналған кеше. *Ғәйепләнеүсенән яуап алыу.. оҙаҡҡа һуҙылды. Сөнки суд ағзалары ла эштең төбөнә төшөү өсөн күп һорау*

*бирҙеләр.* Ғ. Әмири. *Суд процесы ярты сәғәт самаһы дауам итте. .. Судья ғәйепләнеүселәрҙең әле береһенән, әле икенсеһенән эшләнгән енәйәттәре хакында һорашты.* Х. Зарипов.

**ҒӘЙЕПЛӘҮ** *к.* **1.** Ғәйебе бар, ғәйепле тип һанау, ғәйеп тағыу. *Йомшаклыкта ғәйепләү. Талапһыҙлыкта ғәйепләү. Тәртипһеҙлектә ғәйепләү. Хулиганлыкта ғәйепләү.* ■ *[Януҙак:] Үҙеңдән улай-былай ғәйеп тапмағандарҙыр шул? — Юк, .. ғәйепләй алманылар. Был эштә минең катнашым юк тип башта ук әйткәйнем бит [тине Сәғиҙә].* М. Тажи. *— Әле һине яманатлы итмәҫтәр, һаман да шул мине, үгәй әсә уҫаллығынан тип, ғәйепләрҙәр,— тип [әбей Үмәр] картына бик ныкышып караны..* һ. Дәүләтшина. **Ғәйеплеү акты** ғәйепләнеүсенең ғәйебен, енәйәтен асып яҙған кағыҙ. *Ғәйеплеү акты укылып бөткәс, ғәйепләнеүселәргә һүҙ бирелде.* Х. Зарипов. **Ғәйепләү телмәре** ғәйепләнеүселәрҙең ғәйебен, енәйәтен асып прокурор тарафынан судта һөйләнгән һүҙ.

**2.** *кусм.* Етешһеҙлек, насарлык табып, яманлау. *Ашты ғәйепләү.*

♦ **Ғәйепләп китмәгеҙ** (*йәки* **калмағыҙ**) хушлашканда әйтелә торған әҙәп һүҙе.

● *Акыллы үҙен ғәйепләр, алйот иптәшен ғәйепләр.* Әйтем.

**ҒӘЙЕПЛӘҮСЕ** *и.* **1.** Кемделер нимәләлер ғәйепләгән кеше. *Ғәйепләүселәр күп. Ғәйепләүсе табыла. Ғәйепләүсе булыу.* ■ *Күңелдән ғәйепләүселәр ҙә уның йөҙөнә бер карау менән был хакта оноталар. Әйе, сихри нур түгелә бөгөн Зөлхизәнең йөҙөнән. Ул бәхетле.* З. Биишева.

**2.** *Ғәйепләнеүсенең ғәйебен, енәйәтен асып сыккан рәсми кеше. // Ғәйепләүсе як.*

**ҒӘЙЕПЛӘШЕҮ** *к. урт. кар.* **ғәйепләү.**

♦ **Ғәйепләштән булмаһын** кешеләр мөнәсәбәт, баһа тыуҙырырҙай бер иәмә эшләр алдан киҫәтеп әйтелә торған һүҙ. *[Әсмә:] Ярай улайһа, ғәйепләштән булмаһын, бейеп күрһәтәйем.* Х. Ибраһимов.

**ҒӘЙЕПНАМӘ** [*ғәр.* + *фарс.*] *и.* Ғәйепте күрһәтеп яҙған кағыҙ. *.. Ыраҫлыкка баш һалып кайтыусылар Канышка кәңәш бирҙе: — Былай йәшенеп ята алмаҫһың. Әҙәмдең якшыһынан яманы куберәк .. Береһе ошаклар. Ғәйепнамә яҙып, ғәйебенде илт.* Ғ. Ибраһимов.

**ҒӘЙЕПҺЕҘ** *с.* Насар эш кылмаған, ғәйебе юк. *Ғәйепһеҙ кеше. Ғәйепһеҙҙән ғәйепле. Ғәйепһеҙ булыу.* ■ *[Ялал — Бикмырҙа картка:] Кем менән кәңәш иттегеҙ, мылтыкты кайҙан алдың? — Мылтығым да юк. Мин был эштә ғәйепһеҙ.* Т. Хәйбуллин. *Мине һөйөр бүлһаң, башканан кас, мин ғәйепһеҙ, күңелем алынғас* (Халык йырынан).

● *Ғәйепһеҙ аш эҙләмә — ас калырһың, ғәйепһеҙ дуҫ эҙләмә — ťак калырһың.* Мәкәл.

**ҒӘЙЕПҺЕНЕҮ** *к.* Үҙенде ғәйеплегә һанау.

**ҒӘЙЕТ** *[ғәр.] и.* Намаҙ укып үткәрелә торған дини байрам. *Ғәйет көнө. Ғәйет алдынан.* ■ *[Вәли] йома һәм ғәйеттәргә сәллә киймәй барыуҙы килештермәй.* М. Ғафури. **Ғәйет намаҙы** ғәйет көнө мәсеттә укыла торған намаҙ. *Ғәйет намаҙынан кайтыу менән [хужаң] бысак кайрай ине [кәзәне] һуярға.* М. Ғафури. **Корбан ғәйете** *һөйл.* мосолмандарҙа Зөлхизә айының унынсы көнөндә корбан салып үткәрелә торған байрам һәм шунда укыла торған намаҙ. **Ураҙа ғәйете** *һөйл.* ураҙа бөтөү менән үткәрелә торған байрам. **Ғәйет укыу** *һөйл.* ғәйет намаҙын укыу.

**ҒӘЙЕШ** [*ғәр.*] *и. иҫк. кит.* Тормош, эш-хәл.

♦ **Был ни ғәйеш** (*йәки* **быва ғәйеш**) апты раузы белдергәндә әйтелә. *[Муллалар:] Был ни ғәйеш! Дәжжәл һүҙҙәрен тылкыйҙар!* Ғ. Ибраһимов.

**ҒӘЙЙӘР** [*ғәр.*] *с.* Ғәйрәтле, дәртле, кыйыу, батыр; бик көслө. *Ғәййәр ир. Ғәййәр кеше. Ғәййәр булыу.* ■ *Салауат китте тип ук шатланмағыҙ, унан ғәййәр тыуыр донъяға* (Халык йырынан).

**ҒӘЙЙӘРЛӘНЕҮ** *к.* Ғәйрәтләнеү, дәртләнеү, батырланыу, ярһыу. *Ғәййәрләнеп эшкә тотоноу.* ■ *Француз, француз килә, ти .. Яуы еткән Мәскәүгә лә, буҫағала тора, ти .. ғәййәрләнмәк була, ти, юк итәм тип илеңде* (Кобайырҙан).

**ҒӘЙНАН** [*ғәр.*] *р. иҫк. кит.* **1.** Үҙгәрешһеҙ көйө, үҙгәртмәй, шул көйөнсә. *[Хатты] ғәйнан күсерәм.* М. Ғафури.

**2.** *(баш хәреф менән)* Ир-ат исеме.

**ҒӘЙРЕ** [*ғәр.*] *с.* **1.** (*йәки* **бүтән ғәйре**) Бүтән, башка. *Якын тирәлә ерек менән муйылдан ғәйре бер ағас та юк.* Ә. Вахитов.

**2.** *иҫк.* Сифат йәки сифат кылым алдынан килеп, юклык (булмаған, түгел) мәғәнәһе бирә. *Ғәйре ихтияри. Ғәйре рәсми.* ■ *.. Канатһыҙ коштар ҙа була икән шул. Осоуҙары ғәйре тәбиғи булған кеүек, һайрауҙары ла ғәйре тәбиғи уларҙың.* И. Насыри.

♦ **Вә ғәйре** һәм башка, һәм башкалар. *Ул [кенәз Дмитрий] Өфөнән бөтә дүрт юлға сапкын ебәреп, беҙ башкорттарҙы вә ғәйре дин кешеләрен һинең .. указыңды тыңлар өсөн калаға килергә кушты.* «Ағиҙел», 1966, № 12.

**ҒӘЙРӘТ** [*ғәр.*] *и.* Дәрт, көс, кеүәт. *Ғәйрәт кузғалыу.* ■ *Башкорт халкы тарихта ғәйрәт менән фаш булған.* Ш. Бабич. *Кулда ғәйрәт булмаһа, батыр яуҙа түҙә алмаҫ* (Кобайырҙан).

♦ **Ғәйрәт кнлеү** дәрт кузғалыу, дәртләнеү. **Ғәйрәт кайтыу** көс, мөмкинлек бөтөү, дәрт һүнеү. **Ғәйрәт сәсеү** нык ғәйрәтләнеү, ажарланыу, батырланыу. *Пехота алдынан ғәйрәт сәсеп ике танк килә ине.* Ә. Ихсан. *Акбуҙатка менеп, ғәйрәт сәсеп яуға сапкан батыр егеттәр.* Д. Юлтый.

**ҒӘЙРӘТЛЕ** *с.* Дәртле, көслө, кеүәтле. *Ғәйрәтле ир. Ғәйрәтле кеше. Ғәйрәтле кул. Ғәйрәтле булыу.* ■ *Йыһан әбей йәштәр кеүек дәртле һәм ғәйрәтле. Хәлимәгә элек станокты нисек корорға, таҙартырға кәрәклекте әйтеп сыкты..* Ш. Шәһәр.

● *Аяғы ҙур — ғәйрәтле, кулы ҙур — йөрәкле.* Әйтем.

**ҒӘЙРӘТЛЕЛЕК** *и.* Батырлык, кыйыулык. *Башкортостан улдары. Тыуған ил өсөн барған һуғыштарҙа .. батырлык һәм ғәйрәтлек күрһәттеләр.* Ә. Ихсан.

**ҒӘЙРӘТЛӘНДЕРЕҮ** *к.* Дәрт уятыу, ҡеүәт өҫтәү; көс биреү, ғәйрәт биреү.

**ҒӘЙРӘТЛӘНЕҮ** *к.* Дәрт, ҡеүәт менән тоҡаныу; ярһыу. *Ғәйрәтләнеп эшкә тотоноу.* ■ .. *Бөтөнләй ғәйрәтләнеп китергә лә тегеләрҙе [кешеләрҙе] ҡыйратып ташларға иҫәбе бар икән дейеүҙең* (Әкиәттән).

**ҒӘЙСӘР** [*ғәр.*] *и. шигр.* Эҫе шишмә.

**ҒӘЙӘР** *с. кар.* **ғәййәр.** *Күрәһеңме? Ана ғәйәр ирҙәр юлға сығыр өсөн атлығып, шоңҡар ҡоштай тора талпынып.* М. Тажи.

**ҒӘЙӘТ** [*ғәр.*] *р.* Бик, сикһеҙ. *Ғәйәт ҙур. Ғәйәт көслө.* ■ *Түңгәүерҙең батыры Тимерғотло, бер бәһлеүән икән ғәйәт ныҡлы.* «Бабсаҡ менән Күсәк». *Мәрйәм эсәһенең һалҡын көндө урманға утынға китеүенә ғәйәт борсолдо.* М. Ғафури.

**ҒӘКЕТ** [*ғәр.*] *и. кар.* **ғаҡыт.** *[Хәлиулла:] күргәнемде һөйләп ташлаһам, үлтерер был яуыздар, һөйләмәйем, тип ант итәм. Бына, .. һөйләргә тура килеп ташланы бит әле. Ғәкетемде боҙғас, антым башыма төшмәҫме икән һуң минең.* И. Ғиззәтуллин.

**ҒӘКИДӘ** [*ғәр.*] *и. иҫк. дини* Ышаныу, иман. *Бала булһа, ата-инә һөйөнә, миҫле керҙе бер дәүләт өйөнә ғәкидә корбаның уға сала...* Ш. Әминев.

**ҒӘҠРӘП** [*ғәр.*] *и.* **1.** (*баш хәреф менән*) *астр.* Ун ике бөрөждөң бере; Мизан һәм Ҡәүес бөрөждәре уртаһында урынлашҡан.

**2.** Ҡояш календары буйынса һигеҙенсе айҙың ғәрәпсә исеме (22 октябрь — 21 ноябрь; *кар.* **календарь**). *Ғәкрәп айында.* ■ *Тәтегәс бей булғандан һуң, тарих туғыҙ йөҙ илле туғыҙҙа, сысҡан йылында, ғәкрәптең икенсе көнөндә Ҡазан ҡалаһын урыҫ алды.* «Башҡорт шәжәрәләре», 1960.

● *Ғәкрәп башында ҡар яуһа, ҡырҡ көн ҡара ятыр.* Әйтем.

**ҒӘҠС** [*ғәр.*] *и. иҫк. кит.* Кире яҡ, ҡаршы яҡ.
□ **Ғәкс итеү** ҡаршылыҡ итеү. *Кур унда матәм, шау-шыу менән тулған сәма, ғәкс итә астар йөрәгенән ташып сыҡҡан сада.* Б. Мирзанов.

**ҒӘҠСЕЛ** *с. иҫк. кит.* Ҡаршы, кире. *Ахырҙа бер яҡтан ғәксел хәрәкәтселәргә, икенсе яҡтан зәкиселәргә юл асылып, ҙур бандитизм тыуыуына сәбәп булды.* Ш. Хоҙайбирҙин.

**ҒӘҠСӘН** [*ғәр.*] *р. иҫк. кит.* Киреһенсә.

**ҒӘЛИӘССӘЛӘМ** [*ғәр.*] *и.* Дин йолаһы буйынса, мосолмандарҙың пәйғәмбәр исеменә ҡушып әйтә торған именлек теләү, ололау һүҙе. *Мөхәммәт ғәлиәссәләм.*

**ҒӘЛӘБӘ** [*ғәр.*] *и. иҫк. кит.* **1.** Яуланған өҫтөнлөк, еңеү. *Петроград вакиғаһындағы ғәләбәне Рәсәй эшсе-крәҫтиәндәренең бөтә көстәренә туғарырға тура килә.* А. Ибраһим-Ҡыпсаҡ.

**2.** Шау-шыу. *Ундағы ғәләбәләр, бер-береһенә бәйләнеше булмаған күренештәр Хәмиҙәнең күҙ алдынан үтәләр ине.* М. Ғафури.

**ҒӘЛӘЙҺӨССӘЛӘМ** [*ғәр.*] *и. кар.* **ғәлиәссәләм.** — *Мөхәммәт ғәләйһөссәләм миғраж көнөндә күккә күтәрелгән.— Абыстай, уның аэропланы ҡалай булды икән һуң?* Б. Ишемғол.

**ҒӘЛӘКӘ** [*ғәр.*] *и. иҫк.* Бәйләнеш, үҙ-ара яҡынлыҡ. *Әшнәләрҙең бер-береһе араһында ғәләкә һиҙелде.* М. Ғафури.

**ҒӘЛӘМ** [*ғәр.*] *и. кар.* **ғаләм.**

**ҒӘЛӘМӘТ** [*ғәр.*] *и.* **1.** Билге, билдә. *Ҡартлыҡ ғәләмәте. Аҡылһыҙлыҡ ғәләмәте. Көнләшеү ғәләмәте.* ■ *Сажиҙә яуап ҡайтарманы, .. ризалыҡ ғәләмәте белдергәндәй, башын түбән эйеп, сүмесенә үрелде.* И. Насыри.

**2.** Ғәжәпләндерә, аптырата торған хәл. *Был ни ғәләмәт!* ■ *Мәсем хан быны ишетеп кәнәғәт булды.. Кисекмәҫтән бында Бабсаҡ килһен, тине, күрәһегеҙ, быңа ниндәй ғәләмәт булды!* «Бабсаҡ менән Күсәк». / Ығы-зығы, бола. *[Гөлйөҙөм — Мәгфүрәгә:] Еңгә, бөгөн билемдән бик ныҡ ала. Кистән дә ҡалмам ахыры. Оят була инде, бындай ғәләмәт сакта.* Һ. Дәүләтшина.

**3.** *р. мәг.* Бик, сикһеҙ. *Ғәләмәт ҙур. Ғәләмәт матур.* ■ *Тоҡ менән һуғышҡан кешеләр ҙә, арҡан буйлап йүгергәндәр ҙә ғәләмәт ҡыҙыҡ ине.* Ф. Рәхимғолова.

◆ **Ғәләмәт сигеү** (*йәки* **тарыу**) мәшәҡәт, ыҙа күреү, ыҙаланыу.

**ҒӘЛӘМӘТЛӘНЕҮ** *к. һөйл.* **1.** Төрлө ҡыҙыҡ эшләү, ҡыҙыҡ хәлгә ҡалыу. *Шаярып, көлөп ғәләмәтләнеп бөтөү.*

**2.** Ниҙер эшләп аҙапланыу, ни менәндер булышыу. *Иҙән буяп ғәләмәтләнеү.*

**ҒӘМ**[1] [*ғәр.*] *и.* **1.** Күңелдәге ауыр кисереш; көйөк, ҡайғы, хәсрәт. *Ил ғәме. Халыҡ ғәме.* ■ *М. Ғафури, Ш. Бабич, Ю. Юлтый кеүек шағирҙар ауыр йылдарҙа халыҡ ғәмен, «моңдар ғәмен» йырланылар.* Ғ. Рамазанов. *Ҡайҙа баҡма ғәм дә хәсрәт, моңһоу донъя, ҡайғы, зар.* Б. Мирзанов.

**2.** Хәсрәт, моң, уй. *Күңел түрендә һис юйылмаҫлыҡ саф тойғолар ҡалдырған .. Ғизетдин бабай килеп баҫа. Сәмһеҙгә — сәм, ғәмһеҙгә — ғәм бирә торған хикмәтле кеше ине мәрхүмең.* Ә. Гәрәев. *Тыуған Рәсәй, туған әсәйем һин ғәм уятҡан яҡты уйҙарым.* К. Кинйәбулатова.

● *Ғәме барҙың йәме бар.* Мәҡәл.

**ҒӘМ**[2] [*ғәр.*] *и.* Бөтә халыҡ, ябай халыҡ. *[Сабирйән олатай:] — Улым, быны [тарихты] китапҡа сығараһыңмы? Сығар шул, бөтөн ғәм белһен. Балалар белһен,— тип ҡуйыр ине.* Ҡ. Аралбаев. *[Байҙар — батшаға:] Бөтә ғәм берғәләп хәл итә алманыҡ, инде үҙең нишләһәң дә эшлә* (Әкиәттән).

**ҒӘМБӘР** [*ғәр.*] *и.* **1.** Кашалоттың эсәк буйынан сыҡҡан балауыҙ һымаҡ матдә (хушбыйға ҡушыла). *Мисек, ғәмбәр еҫе аңҡый, Ғәмбәр һиндә..* Ш. Бабич.

**2.** (*баш хәреф менән*) Ҡатын-ҡыҙ исеме.

**ҒӘМЛЕ** *с.* **1.** Ҡайғы-хәсрәте бар, ҡайғылы, хәсрәтле. *Зәмзә апай ғәмле күҙҙәре менән беҙгә боролоп ҡараны.* Й. Солтанов. *Ағиҙелкәйҙәрҙең аръяғында, ғәмле ҡыҙ Ғәмилә, ҡарҙан ҡаты төшкән ҡырау бар* (Халыҡ йырынан).

**2.** Хәстәрле, вайымлы. *Халҡым ғәмен татҡан ғәмле күңел моңдар ғәме менән яна ул.* Д. Юлтый.

**ҒӘМЛӘҮ** *к.* Ниҙер ҡайғыртып, хәстәрләү. *Ялға киткәндә йортҡа кеше ҡалдырғайныҡ, бер*

*ҙә гәмләмәгән.* М. Тажи. *Бына тәртип, бына низам шулай ул — һине гәмләп, һине һаклап илай ул* (Мөиәжәттән).

**ҒӘМҺЕҘ** *с.* **1.** Бер нәмәгә лә бошмаған; уйлана белмәгән; вайымһыҙ, моңһоҙ. *Ғәмһеҙ йоҡо. Ғәмһеҙ ҡараш. // Ғәмһеҙ йәшәү. Ғәмһеҙ ҡарау.* ■ .. *Донъяла гәмһеҙ йәшәгән, «яҙмыш шулай ҡушҡандыр инде» тип, кәмһетеүҙәргә, кешелеге тапалыуҙарга риза булып йәшәүселәр аҙ түгел.* А. Карнай. *Ә мин, тиле, бер нигә иҫе китмәй торған шаян, шат, гәмһеҙ йәш кеше ролен уйнауҙы дауам иттем.* З. Биишева.

**2.** Ҡайғы, хәсрәте булмаған, ҡайғы-хәсрәтһеҙ. *Ғәмһеҙ кеше. Ғәмһеҙ булыу.*

**ҒӘМҺЕҘЛЕК** *и.* **1.** Вайымһыҙлыҡ, моңһоҙлоҡ, ҡайғыртмаусанлыҡ. *Ғәмһеҙлек арҡаһында.* ■ *Ҡалды балалыҡ, бөттө гәмһеҙлек. Килде нурланып ялҡынлы йәшлек.* Ҡ. Даян.

**2.** Ҡайғыһыҙлыҡ, хәсрәтһеҙлек.

**ҒӘМӘЛ** [*гәр.*] *и.* **1.** Эш, хеҙмәт. *Теләймен — һис теләгем ҡабул түгел. Әллә мин ҡылдыммы икән яуыз гәмәл.* М. Ғафури.

**2.** Эш, тормош булмышы. *Ғәлиәкбәров әҙерәк уйланып торгас, үҙ волосына ҡайтыу гәмәлгә ярашлыраҡ булыр, тип тапты.* Ф. Иҫәнғолов.

**3.** *мат.* Математикала хисаплауҙың төп төрө. *Дүрт гәмәл. Алыу гәмәле. Ҡушыу гәмәле.*

**4.** *дини* Намаҙ, ғибәҙәт. *Беҙҙең өсөн ҡайгырмагыҙ, изге гәмәлдәр ҡылыгыҙ* (Бәйеттән).

◆ **Ғәмәлгә ашыу** үтәлеү, тормошҡа ашыу. **Ғәмәлгә ашырыу** үтәү, тормошҡа ашырыу. *Халыҡ дәүләт власын Башҡорт АССР-ының политик нигеҙен тәшкил итеүсе халыҡ депутаттары Советтары аша гәмәлгә ашыра.* Башҡорт АССР-ының Конституцияһы, 1984. **Ғәмәлгә килеү** барлыҡҡа килеү, хасил булыу. **Ғәмәл дәфтәре** 1) *иҫк.* эш-хеҙмәтте яҙып бара торған дәфтәр; эш дәфтәре. *[Ғиззәтулла — Санияга:] Йәһәт кенә Ғәләүиҙе саҡырып алып кил. Йыллыҡ отчет кенәгәһен, башҡа гәмәл дәфтәрҙәрен ҡалдырмаһын!* Ғ. Әхмәтшин; 2) дини ҡараша, һәр кешенең гөнаһы яҙылып бара торған дәфтәр. *[Сабир мулла:] Унда [теге донъяла] һәр кемдең гәмәл дәфтәре ята икән, минең гәмәл дәфтәремдең бер ҙә генә рәте юҡ.* Б. Ишемғол. **Ғәмәлгә ҡуйыу** ҡулланыу, тормошҡа ашыра башлау. *1922 йылдан башлап башҡорт телен гәмәлгә ҡуйыу хаҡында хәстәрлек көсәйә.* Ғ. Рамазанов. **Ғәмәлдә ҡалыу** үҙ көсөндә, закон хәлеидә булыуын дауам итеү, ҡулланышта йөрөү. **Ғәмәлдән сығыу** ҡулланышы бөтөү, законлы булыуҙан туҡтау, ҡулланыуҙан сығыу.

● *Ниәт — ярты гәмәл.* Әйтем.

**ҒӘМӘЛДӘ** *р.* Булмышта, ысынында, ысынбарлыҡта. *Ер һөрөлгән булып иҫәпләнә, ә гәмәлдә һөрөлмәгән.* ■ *Ғәмәлдә иң элек опера һәм балет театры .. үҙәк булып әүерелергә тейеш.* Б. Бикбай.

**ҒӘМӘЛДӘГЕ** *р.* Булмыштағы, тормоштағы. *Ғәмәлдәге закон.*

**ҒӘМӘЛИ** [*гәр.*] *с. иҫк.* Ғәмәлгә (1, 2 мәғ.) билдәле, тормошҡа нигеҙләнгән; практик. *Ғәмәли эш.* ■ *Кәшиф уйлай, күпме тауар, нәмә барлыгын белә, шунан гәмәли сараларга керешә, көрәк, итек, сәй, ситса .. етештереү юлын таба.* А. Таһиров.

**ҒӘМӘЛЛӘШТЕРЕҮ** *ҡ. кит.* Тормошҡа ашырыу. *Партия ҡарарҙарын тиҙерәк гәмәлләштерергә кәрәк.*

**ҒӘНИ** [*гәр.*] *с. иҫк.* **1.** Бай, дәүләтле, мул тормошло. *Ғәни кеше. Ғәни булыу.* ■ *[Иштәктәр] Иҙел буйҙарында һәм урмандарҙа бал ҡорттары менән, һыуҙа ҡондоҙ менән, яланда һыуһар-төлкө менән эш итеп, гәни булдылар.* «Башҡорт шәжәрәләре», 1960.

**2.** (*баш хәреф менән*) Ир-ат исеме.

**ҒӘНИМӘТ** [*гәр.*] *и.* **1.** Һуғышта дошмандан баҫып алынған нәмә; улъя, трофей. *Ғәнимәт итеп алыу. // Ғәнимәт малдары. Ғәнимәт табыш.* ■ *Урам ҡыҙыу, бөркөү. Һалдаттарҙа йөк ауыр, береһе лә таланган гәнимәтте ташламай, елкәләренә күтәреп .. алып баралар.* Д. Юлтый. *Еңелгән халыҡтарҙан таланып алынған гәнимәт малдары .. аңһыҙ халыҡтың күҙҙәрен буяр өсөн дә етә.* М. Ғафури.

**2.** *күсм.* Табылған нәмә; табыш. *[Ҡыҙ — картҡа:] Нишләп ул һинең йөҙөгөң булһы, ти. Мин уны һыуҙан таптым. Ул миңә гәнимәт табыш булды* (Әкиәттән).

**3.** *иҫк.* Уңыш, бәхет. *Ғәнимәт һанау.* ■ *Эй сабый, .. татлы гүмереңң .. яҡшы бел татлылыгын. Бел гәнимәт был ваҡытты тойорлоҡ саҡ был сагың.* Ш. Тулвинский.

**4.** *күсм.* Көрәштә яулап алынған нәмә; уңыш, ҡаҙаныш. *Беҙ Октябрь революцияһының гәнимәттәрен һаклау өсөн күтәрелергә һәр минутта әҙер торабыҙ.* Ғ. Әбдрәшитов.

◆ **Ғәнимәт белеү** берәй нәмәнән, осраҡтан файҙаланыу, уңай, форсат тип һанау. *Мулла агай менән бик ҡаты асыуланышырга тура килде. Мин ошо форсатты гәнимәт белеп, мәҙрәсәне ташлап сыгып [киттем].* М. Ғафури.

**ҒӘНИМӘТСЕ** *и.* Табыш табыусы.

**ҒӘР** [*гәр.*] *и.* Намыҫ хисе. *Һинең [халҡым] зарың зарым булды күңелдә, һинең гәрең гәрем булды гүмергә.* С. Ҡудаш. **Ғәргә тейеү** ғәрләндереү.

□ **Ғәр итеү** ғәрләнеү, намыҫланыу, хурланыу. *Ер һатыу менән мәшгүл кешеләр! Нисек гәр итмәй йөрөйһөгөҙ, эй агайҙар* (Бәйеттән).

● *Тәнен һатҡан гәрен һатыр.* Әйтем.

**ҒӘРБИ** [*гәр.*] *с. иҫк.* Көнбайыштағы, көнбайыш. *Ғәрби Европа.*

**ҒӘРЕЗ** [*гәр.*] *и. ҡар.* **ғарыз.**

**ҒӘРЕП** [*гәр.*] *и. иҫк.* Көнбайыш, көнбайыш яҡ. *Алга киткән гәрептәге Аурупанан [Европанан] гибрәт алды шәректтәге магул, ҡалмаҡ.* М. Ғафури. *Ғәреп буржуйҙары ҡәберлектә уйнай, ҡан һата.* Ғ. Хәйри.

**ҒӘРЕПСЕЛӘҮ** *ҡ. диал.* Теләнселәү.

**ҒӘРЕШ** [*гәр.*] *и. иҫк.* Дини ҡараш буйынса күктәге тәхет, алла тәхете. *Шул барыштан барышыма, киттем хоҙайҙың гәрешенә.* Ш. Бабич.

◆ **Ғәрешкә китеү** үлеү; теге донъяға китеү. **Ғәрешкә күтәреү** бик ныҡ маҡтау. *Хаятты ошо матурлыгы менән берәр илаһи шагир осратһа, гәрешкә күтәрер, иркә хур ҡыҙҙарына тиңләр ине.* Һ. Дәүләтшина. **Күҙҙе ғәрешкә текәү** (*йәки төбәү*) үргә ҡарап ҡатыу. *[Сабир мулла]*

*күҙҙәрен гәрешкә төбәп, йөҙөнә үлем әсеһе эсендә яткан кеше ҡиәфәтэ сығарып, үҙәк өҙгөс э-эһ .. килеп мөңрәне.* И. Ғиззәтуллин.

**ҒӘРИП**[1] [*гәр.*] *с.* Берәр ере, ағзаһы имгәнгән; зәғиф. *Таумыштан гәрип. Ғәрип булыу. Ғәрип булып ҡалыу.* ■ *[Оксана:] .. Нур, һин беҙҙең ауылды дошмандан азат иткәндә һуҡырайҙың .. Аңла, һин бит гәрип.* И. Абдуллин.

**ҒӘРИП**[2] [*гәр.*] *и. иҫк.* **1.** Үҙ иленән айырылған, ситтә йөрөгән кеше. *[Күсер хан:] Илдән илгә йөрөйөм, балам, ил гәриптәре булайым, балам, Ҡуҙыйкүрпәс кеүек егетте табайым, балам.* «Ҡуҙыйкүрпәс менән Маянһылыу».

**2.** *күсм.* Йортһоҙ-ерһеҙ ярлы, меҫкен кеше. *Ғәриптәрҙе һис бер әҙәм алмаҫ һанга* (Бәйеттән).

**ҒӘРИП**[3] [*гәр.*] *с. иҫк. кит.* Ғәҙәттән тыш ят, ғәжәп. *Ғәрип хәл.*

**ҒӘРИП-ҒӨРӘБӘ** [*гәр.*] *и. йыйн.* Зәғиф, гәрип кешеләр. *[Һугышка] киткән ирҙәрҙең күбеһенән «похоронный» килде, ҡайтҡандары — гәрип-гөрәбә.* Х. Ғиләжев.

**ҒӘРИПЛЕК** *и.* **1.** Ғәрип булған хәл. *Ғәриплеге арҡаһында. Ғәриплекте дауалау.* **Ғәриплек күреү** сит, ят ерҙәрҙә ҡағылып-һуғылып, нужа күреп йөрөү. *Күп гәриплек күрһәм дә, йәр юлында үлһәм дә, йөрөмәй күңелем тынмайҙыр.* «Буҙйегет».

**2.** *күсм.* Нимәләлер булған кире күренеш. *Мораль гәриплек.* ■ *Доктор, .. әйтер инең, идея гәриплеген төҙәтергә ниндәй дарыу бар?* Б. Бикбай.

**ҒӘРИПЛӘНДЕРЕҮ** *к.* Ғәрип[1] итеү; ғәрипләү. *Кешене гәрипләндереү.*

**ҒӘРИПЛӘНЕҮ** *к.* Ғәрипкә[1] әйләнеү, ғәрип булыу. *Инвалид ул Өлфәт — аяҡһыҙ, .. уң аяғы уның агастан, гәрипләнеп ҡайтты һугыштан.* М. Сөндөклө. *[Исхаков:] Бына ҡайттым .. Ғәрипләнеп, ҡултыҡ таяҡланып ҡайттым.* И. Абдуллин.

**ҒӘРИПЛӘҮ** *к.* Ғәрипкә[1] әйләндереү, ғәрип итеү. *Һугып гәрипләү. Физик яҡтан гәрипләү. Рухи яҡтан гәрипләү.*

**ҒӘРЛЕ** *с.* Ояла, хурлана белеүсән; намыҫсаи. *Ғәрле булыу.* ■ *[Әсә:] Үҙем ярлы булһам да, буйым гәрле. Ат алмай тороп, колхозга керер хәлем юҡ.* З. Ғәлимов.

**ҒӘРЛЕК** *и.* Намыҫланыу, хурланыу тойғоһо; намыҫ, оят, хурлыҡ. *Ғәрлек тойгоһо. // Ғәрлек эш.* ■ *Дошман Рәсәй тупрагын тапай, тиген, ә? — тине карт.— Әйтмә инде, Тимер олатай,— тине һалдат гәрлек ҡатыш һыҙланыу менән..* Ә. Ихсан. **Ғәрлеге ни тора!** нимәгәлер ныҡ ғәрләнгәндә, үтә намыҫланғанда әйтелгән һүҙ. *Был тиклем нахаҡтан рәнйетерҙәр икән. Ғәрлеге ни тора!* Һ. Дәүләтшина. *[Нурый:] Пленда ултырыуҙың гәрлеге ни тора!* Ш. Биҡкол. **Ғәрлек килеү** намыҫ ярыу, хурланыу; ғәрләнеү.— *Ә бына бында үҙеңде һатҡанһың. Беләгеңә кунган ҡошто осороп ебәргәнһең ... тине Ғимаҙ. Байрамголдоң был һүҙҙәргә бик ныҡ гәрлеге килде.* И. Насыри. **Кешенән ғәрлек** кеше алдында оятҡа, хурлыҡҡа ҡалғанда әйтелә.

**ҒӘРЛЕКЛЕ** *с.* Ғәрлек тойғоһо көслө, ныҡ намыҫлы. *Ғәрлекле тойго.* ■ *Ғәрлекле ауыр уй солгап алганда ла, йөрәге һыгылып, тыны ҡыҫылганда ла Айбулат күңелле ине.* М. Минһажетдинов.

**ҒӘРЛЕКҺЕҘ** *с.* Ғәрләнә, ояла белмәгән, ғәрлеге булмаған. *Ғәрлекһеҙ әҙәм.*

**ҒӘРЛӘНДЕРЕҮ** *к.* Ғәрлек тойғоһо уятыу. *Приказчиктың .. аҡырып һүгенеүе Айбулатты бик ныҡ гәрләндерҙе.* Һ. Дәүләтшина.

**ҒӘРЛӘНЕҮ** *к.* Ғәрлек тойғоһо кисереү; намыҫланыу, хурланыу. *Ныҡ гәрләнеү. Ғәрләнеп илау. Ғәрләнеүенән ни эшләргә белмәй.* ■ *Улар, бай ҡыҙҙары, яҡшы кейенгән. Беҙҙең кеүек шамыт-шомот кейемле егеттәр менән ярышлап барырга гәрләнәләр.* Ш. Шәһәр. *Минең атай көн дә һис югында бер ҡаҙыҡ ҡаҡмаһам, икмәк телемен ашарга гәрләнәм, тип һөйләй торгайны.* Д. Исламов.

**ҒӘРРӘ** [*гәр.*] *иҫк.*: **ғәррә булыу** ауыр хәлгә ҡалыу, аптырау. *Ҡуҙыйкүрпәс Маянһылыуга үҙен таныта алмай гәррә була ине.* «Ҡуҙыйкүрпәс менән Маянһылыу».

**ҒӘРСЕЛ** *с.* Тиҙ ғәрләнә торған, ғәрләнеп барыусан. *Ғәрсел кеше. Ғәрсел булыу.* ■ *Көнләшеүҙең тик саҡтыһы күренһә лә, һүндерә күр!.. Уның уты бик дәһшәтле, һәләкәтле, гәрсел йөрәк сыҙай алмай ул ялҡынга.* Ҡ. Даян.

**ҒӘРСЕЛЛЕК** *и.* Ғәрсел булған хәл. *Ғәрселлек тойгоһо.* ■ *Ғәрселлек менән сәмлелек икеһе бер туган бит ул.* И. Ғиззәтуллин. **Ғәрселлек килеү** көслө ғәрлек тойғоһо уяныу, намыҫланыу, хурланыу, ғәрләнеү. *Миңә әйтмәй ситтәр менән китеүенә гәрселлегем килде.*

**ҒӘРШЕ** [*гәр.*]: **гәрше көрси** *иҫк. дини* Күк тәхете. *Май көнө эш байрамы булгас, сәждәм уга минең. Ул мөҡәддәс гәрше көрси, ҡиблам ул, кәгбәм минең.* И. Насыри.

**ҒӘ́РӘП** [*гәр.*] *и.* **1.** Көнъяҡ-көнбайыш Азия һәм Төнъяҡ Африканың ғәрәп илдәрендә йәшәгән халыҡтарҙың ҙур төркөмө һәм шул төркөмгә ҡараған халыҡтың бер кешеһе (сәмит телдәренең береһендә һөйләшә). *Бәдәүи гәрәбе. Ғәрәп теле. Ғәрәп ҡатыны.* **Ғәрәп аты** иң боронғо тоҡомло меңге ат. **Ғәрәп графикаһы** яҙыуы, шрифы ғәрәп теле алфавитына нигеҙләнеп, башҡорттарҙа латин яҙыуына ҡәҙәр ҡулланылған яҙыу системаһы. **Ғәрәп цифрҙары** урта быуаттарҙа ғәрәптәрҙән алынып, хәҙерге көндә киң таралыш алған цифрҙар, һан тамғалары.

**ҒӘРӘПСӘ** *р.* **1.** Ғәрәп телендә. *Ғәрәпсә аңлау. Ғәрәпсә һөйләшеү. Ғәрәпсә уҡыу.*

**2.** Ғәрәптәр кеүек, ғәрәп халҡына хас. *Ғәрәпсә бейеү. Ғәрәпсә кейенеү.*

**ҒӘРӘСӘТ** [*гәр.*] *и.* **1.** Бик көслө ел-дауыл. *Көҙгө гәрәсәт. Көслө гәрәсәт. Яҙгы гәрәсәт. Ғәрәсәт ҡубыу. / күсм.* Зил-зәбәр килгән оло бола. *Ғәрәсәт ҡуптарыу. Һугыш гәрәсәте.* ■ *Тыуган ерҙе һаклай алһам ине гәрәсәттәр килгән сагында.* Х. Кәрим.

**2.** Дини ҡараш буйынса, әхирәт көнөндә барлыҡ халыҡ ҡуҙғалышып, зыҡ ҡубып йыйыла торған майҙан. *[Сабир мулла:] Сыгып китеп бара торгас, бик күп халыҡ күрҙем: дөйә, ишәк, үгеҙ, һарыҡҡа атлангандар. Ғәрәсәтме әллә тип торһам, .. сират күперенең төбөндә сират көтөп торалар икән.* Б. Ишемғол.

**ҒӘРӘСӘТЛЕ** *с.* Ҡуҙ асҡыһыҙ ҡар-буранлы, ел-ямғырлы, көслө дауыллы. *Ғәрәсәтле көн.* ■ *Ғәрәсәтле дауыл ҡапыл ҡупты далала, ышыҡланыр бер урын юҡ яҡын арала.* М. Сиражи. / *күсм.* Ҙур ҡуҙғалыш булған, оло болалы. *Ғәрәсәтле саҡта тыуғандар беҙ булманыҡ һуғыш ҡырында, окоптарҙа түгел, өйҙәрҙә, ҡалтырандыҡ ҡышҡы буранда.* С. Ғәбиҙуллин.

● *Холоҡһоҙ ҡатын — ғәрәсәтле көн.* Әйтем.

**ҒӘРӘФӘ** [*ғәр.*] *и.* Ғәйет алды көнө; әрәпә.

**ҒӘСКӘР** [*ғәр.*] *и.* **1.** Дәүләттең бөтә ҡоралл көстәре; армия. *Совет ғәскәре.* ■ *Ғәскәрҙән ҡайтҡас, ауылда нисек эшләү тураһында ул күп кенә мәғлүмәт алған.* Д. Юлтый.

**2.** Ҡоралы көстәрҙең айырым бер төрө, бүлеге. *Атлы ғәскәр. Йәйәүле ғәскәр. Сик буйы ғәскәрҙәре.* **Ғәскәр башы** *һөйл.* ҡоралы көстәрҙең башлығы; командир. *Ҡыйғыр бөркөт кеүек ай Салауат башҡорт ғәскәрҙәре башында* (Халыҡ йырынан).

**3.** *иҫк.* Ҡоралы көстәрҙә хеҙмәт иткән кеше; һалдат. *Һөләймәнде ике яғынан ике ғәскәр тотоп, батшаға алып килгән* (Әкиәттән).

**4.** *һөйл.* Нимәлер эшләгәндә тупланған ҙур бер төркөм.

● *Ғәскәр башы гәҙәл булһа, дошман аяҡ аҫтында.* Әйтем.

**ҒӘСКӘРИ** [*ғәр.*] *с.* **1.** Ғәскәргә мөнәсәбәтле; хәрби. *Ғәскәри байраҡ. Ғәскәри бүлек. Ғәскәри тәртип. Ғәскәри тормош. Ғәскәри хеҙмәт.* ■ *Башҡорттар беренсе май көндө .. Ватан алдында ғәскәри ант бирҙеләр.* Ә. Ихсан. *Зәки .. ғәскәри кейемдә — шинель, йондоҙло күк бүрек кейеп, биленә ҡайыш быуып, сумка тағып ҡайтып инде.* С. Агиш.

**2.** *и. мәғ.* Хәрби хеҙмәткәр. *Революцияның көслө тулҡындары ғәскәриҙәрҙең йөрәктәренә бәреп керҙе.* М. Ғафури. *Ҡайҙа ҡарама, һоро шинелле, ҡыҫҡа тунлы, йәшел һырмалы ғәскәриҙәр.* Д. Исламов.

**ҒӘҪРӘТ** [*ғәр.*] *и. иҫк.* **1.** Кемдеңдер эләгеп һөрлөгөүе, тәгәрәүе. *Майҙанда ул [Фазыл] сығарҙы артыҡ ғәйрәт, бәйгелә уҙғандарҙан сыҡты ғәҫрәт.* Аҡмулла.

**2.** *күсм.* Яңылышлыҡ, хата.

**ҒӘТЕРШӘ** [*ғәр.*]: ғәтершә майы хуш еҫле май; хушбуй. *Тауар бар, шәкәр бар! Француз яулыҡ, сәмсәле итек! Баҙыян, ҡәнәфер, ғәтершә майы!* К. Мәргән. **Ғәтершә гөлө** еҫле гөл.

**ҒӘТЕФ** [*ғәр.*] *и. иҫк. кит.* Йөҙ йүнәлеше, боролошо.

□ **Ғәтеф итеү** йөҙ йүнәлтеү, йөҙҙө бороу, әйләндереү. *Фәтех итеп Фәтих Кәрими файҙалы эштәр ғәтеф итә.* Ш. Бабич.

**ҒӘҮЕН** [*ғәр.*] *и. иҫк. кит.* Ярҙам, булышлыҡ. *Шарлатан Шәкир юрист, ай-һай ғорурлы фирғәүен! Фирғәүендәр бик күбәйҙе, тәңрем, үҙең бир ғәүен.* Ш. Бабич.

**ҒӘҮЕР** [*ғәр.*] *и.* **1.** Һыуҙың тәрән ере, төпкөл.

**2.** *күсм.* Тәрән мәғәнә, тәрән фекер.

□ **Ғәүер булыу** төпкөлгә китеү; ситләшеү. *Бер эшкә баш йәки кәүемгә рәис булған кеше үҙ файҙаһын күҙәтеп, ғәйреләрҙән ғәүер булыр.* С. Яҡшығолов.

**ҒӘҮРӘТ** [*ғәр.*] *и.* Тәндең кешегә күрһәтергә ярамаған ере; оят ер. *Ҡулдәк-ыштан ҡалманы ғәүрәтемде ябырлыҡ. Бында йөрөгән әҙәмгә хоҙай бирһен сабырлыҡ* (Бәйеттән).

**ҒӘФИФӘ** [*ғәр.*] *с. иҫк. кит.* **1.** Саф, пак. *Әй, ғәфифә, әй матур һин, мине мәхрүм әйләмә.* Н. Ҡәрипов.

**2.** (*баш хәреф менән*) Ҡатын-ҡыҙ исеме.

**ҒӘФИӘТ** [*ғәр.*] *и.* **1.** Иҫәнлек, һаулыҡ, сәләмәтлек.

**2.** (*баш хәреф менән*) Ир-ат исеме.

**ҒӘФИӘТЛЕ** [*ғәр.*] *с. иҫк.* Иҫән, һау, сәләмәт. *[Мәрйә ханым — Зәйнәпкә:] Һин намыҫлы, әҙәпле булдың, ошо намыҫыңды юғалтма, әҙәпле бул, ғәфиәтле бул.* А. Таһиров.

**ҒӘФЛӘТ** [*ғәр.*] *и.* Ғәмһеҙлек, вайымһыҙлыҡ, моңһоҙлоҡ. *Ғәфләт баҫыу.* ■ *Һигеҙенсе йөҙ йылдың һуңғы яртыһы. Иҙел, Урал буйҙарындағы татар, башҡорттар бик тәрән ҡараңғылыҡта сикһеҙ ғәфләттә йәшәй.* М. Ғафури. **Ғәфләт йоҡоһо** 1) *ҡар.* **йоҡо;** 2) *күсм.* үтә ныҡ вайымһыҙлыҡ, ғәмһеҙлек.

**ҒӘФҮ** [*ғәр.*]: **ғәфү итеү** (*йәки* **ҡылыу**) кемдеңдер ғәйебен кисереү; ярлыҡау. *Ябай халыҡ Өйрәнсеккә ышанған. Уның насарлыҡтарын оноткан, ғәфү иткән.* З. Биишева. **Ғәфү ит(егеҙ)** өндәшкәндә, мөрәжәғәт иткәндә ҡулланыла торған әҙәп һүҙе.— *Ғәфү ит һин, исемеңде белмәйем.* Ғ. Сәләм. **Ғәфү үтенеү** кемдәндер ғәйепләмәүҙе, кисереүҙе һорау. *Шул ғәйебем төйөр булып, ултырҙы бит тамаҡҡа. Их, ғәфү үтенер инем, тотоп һукһәм наҡаҡҡа.* М. Кәрим.

**ҒӘФФАР** [*ғәр.*] *и. иҫк.* Ғәфү итеүсе, кисереүсе. *Әле генә ләғнәт ороп таштым, шаштым .. Әле ғәффар булып, әле ҡәһһар булып, холоҡландым тәңрем холҡондай.* Ш. Бабич.

**ҒӘҺДИ** [*ғәр.*] *с. иҫк.* Вәғәҙәле.

**ҒӘҺЕД** [*ғәр.*] *и. иҫк.* Биргән һүҙ, вәғәҙә, ант. *Ғәһедте боҙоу.*

□ **Ғәһед** итеү (*йәки* **биреү, ҡылыу**) ант итеү, һүҙ биреү. *Ғәһед ҡылдым, йәмин иттем, ҡыҙыл байраҡ тотоп ҡулға.* М. Ғафури.

**ҒӘШИРӘТ** [*ғәр.*] *и. иҫк.* Ҡәрҙәш-ырыу, туған-тумаса. *Батшаның ҡәрендәштәре, ғәширәттәре менән уртаҡҡа «удельный» тигән ерҙәре — һигеҙ миллион да дүрт йөҙ мең дисәтинә.* М. Өмөтбаев.

# Д

Д [дә] Башҡорт алфавитының алтынсы хәрефе.

**ДА** (дә)[1] *терк. ҡар.* **ла**[1]. *Сәғиҙә өйөнә ҡайтып еткәнсе уйланды. «Сафураны юҡҡа ғына ашығып быйыл биреп ҡуйҙыҡ. Хәҙер уны ни тиклем теш-тырнаҡ менән тартһаң да, кеше кешеһе үҙеңдә булмай инде. .. Китһә, бигерәк ҡыйын булыр шул.* Һ. Дәүләтшина.

● *Баҡырҙы күпме ағартһаң да көмөш булмаҫ.* Мәҡәл. *Моңһоҙҙоң да бер йыры була.* Мәҡәл. *Тауға ҡарап тау булмаһаң да яуға ҡарап арт бирмә.* Мәҡәл.

**ДА** (дә)[2] *киҫ. кар.* **ла**[2]. .. *Ағайың да һәйбәт егет ине, тик йәшел йылан ғына башына етеп әрәм итте.* Б. Бикбай.

♦ **Да һаһа** *шул ук* **ла һаһа** (*кар.* **һаһа**[2]).

● *Аҡыллыға ым да етә, ахмаҡҡа туҡмаҡ та аҙ.* Мәҡәл. *Батырға ла ял кәрәк.* Әйтем. *Йылы ергә йылан да эйәләшә.* Мәҡәл.

**ДАБАҺА** (дәбаһа) *киҫ. шул ук* **да баһа** (*кар.* **баһа**[2]). *Бөркөт күҙле, арыҫлан йөрәкле Бураншаl Йәшәү өсөн, бәхет, шатлыҡ өсөн тыуғайның дабаһа һин, Бураншаl* З. Биишева.

**ДАБЫЛ** *и. иҫк.* Хәбәр, һүҙ, имеш-мимеш.

**ДАБЫР** *окш.* Ҡатыраҡ йоҡа нәмәгә ҡаты нәмәләр туҡтауһыҙ тейгәндә, бәрелгәндә сыҡҡан тауышты белдергән һүҙ. *Мискә дабыр итеп тәгәрәп китте.*

**ДАБЫР-ДОБОР** *окш.* Ҡабат-ҡабат дабыр иткән тауышты белдергән һүҙ. *Дабыр-добор итеү. Дабыр-добор килеү.*

**ДАБЫРЛАТЫУ** *к.* **1.** Дабыр иткән тауыш сығарыу; дабыр иттереү. *Өй түбәһен дабырлатып борсаҡ яуып үтте.*

**2.** *күсм.* Берәй һүҙҙе, хәбәрҙе таратыу, шаулатыу. *Ул хәбәрҙе бөтә ауылға дабырлатып һөйләп яталар.* Һ. Дәүләтшина.

**ДАБЫРЛАУ** *к.* Дабыр-добор итеү, дабыр-добор килеү. *Ҡаты юлда арба тәгәрмәстәренең, ат тояҡтарының дабырлағаны ишетелә.*

**ДАВАЙ** [*рус.*] *өнд. һөйл.* **1.** Өндәү, саҡырыуҙы белдерә; әйҙә. *Давайығыҙ, иптәштәр, тиҙерәк.* ■ *Әкиәт бөттө, беҙ ҡалдыҡ, давай егеттәр, эшкә күҙгалдыҡ* (Әкиәттән).

**2.** Талап итеүҙе белдерә; бир. *Ғәләү өйҙән сығып: — Шәхми бай, етерлек булды һиңә, давай договор,— тип ҡысҡырып та ебәрҙе.* Т. Йәнәби.

**ДАВАЙЛАУ** *к. һөйл.* Ҡәтғи рәүештә ниҙер талап итеү. *Давайлап һорау.* ■ *— Ҡайҙа, бир әле! — тип мин хатты давайлай башланым. Күпме һораһам да Вәсилә хатты күрһәтмәне..* Р. Солтангәрәев.

**ДАҒА** *и.* **1.** Тайыуҙан һәм зарарланыуҙан һаҡлау өсөн ат тояғына ҡағыла торған тырнаҡлы тимер. *Тимер дага. Ат дағаһы. Дага ҡағыу.* ■ *Уң ҡулда ҡалған таш юлдан ат дағаларының саҡылдауы ишетелә.* Ш. Шәһәр. / Аяҡ кейеменең үксәһенә ҡағыла торған тимер. *Дағалыҡ тимер. Дага ҡаҡтырыу.* ■ *Ҡуҙлауай ҙа итек, ай еҙ дага, баҫҡан ғына һайын ҡом туҙа* (Халыҡ йырынан).

**2.** *диал.* Аяҡ кейеменең үксәһе. *Бейек дага.* ■ *Аяҡта осло дағалы, сәмсәле итек.* З. Биишева.

**ДАҒАЛАНЫУ** *к. төш. кар.* **дағалау.** *Дағаланған ат.* ■ *Коридорҙа дағаланған итек кейгән бер жандарм шаҡылдатып баҫып йөрөй.* М. Хәй.

**ДАҒАЛАТЫУ** *к. йөкм. кар.* **дағалау.** *Ике лә туры ат дағалаттым, таш урамҡайҙарҙан тайыр тип* (Халыҡ йырынан).

**ДАҒАЛАУ** *к.* **1.** Даға ҡуйыу, даға ҡағыу. *Ат дағалау.* ■ *Тимерйән тимерлек янында сыуала. Тимерсенең ат дағалағанын күҙәтә.* Н. Ғәлимов.

**2.** *күсм.* Бөлдөрөү. *Байҙарҙы дағалайбыҙ, көндәрен бөтөрәбеҙ.* А. Таһиров. *Балын эсәйек әле беҙ ул ҡарттың. Бик һәйбәтләп кенә дағалап ҡайтайыҡ.* Ж. Кейекбаев.

● *Ат дағалағанда баҡа ботон ҡыҫтырған.* Мәҡәл.

**ДАҒАЛЫ** *с.* Даға ҡуйылған, дағаланған. *Дағалы ат. Дағалы итек.* ■ .. *Таш урамда дағалы аттарҙың тауыштары яңғырап ҡала.* Д. Юлтый.

**ДАҒАН** *и. диал.* Таған.

**ДАҒЫР** *окш.* Тигеҙһеҙ ҡаты нәмәләр бер-береһенә ышҡылғанда, ҡағылып-бәрелгәндә сыҡҡан тауышты белдергән һүҙ. *Дағыр итеп ҡалыу.*

**ДАҒЫР-ДОҒОР, дағыр ҙа доғор** *окш.* Ҡабат-ҡабат дағыр иткән тауышты белдергән һүҙ. *Дағыр-доғор итеү.* ■ *Ултырғыстар, эскәмйәләр дағыр-доғор иткән шау-шыу араһында Айбикә коридорға сыҡты.* Һ. Дәүләтшина. *Баҙҙан картуф сығарып, дағыр-доғор йыуып, бешерергә һалдым.* К. Кинйәбулатова.

**ДАҒЫРЛАТЫУ** *к.* Дағыр-доғор иттереү. *Ишекте дағырлатыу.*

**ДАҒЫРЛАУ** *к.* Дағыр-доғор итеү. *Буш арбаның дағырлауы ишетелә.*

**ДАД** [*фарс.*] *и. кар.* **дат**[2].

**ДАДАН, дадан умарта** *и.* Таҡтанан яһалған дүрткел умарта. *Рәхмәт дадандағы аса һалып, рамды һурып сығара ла, ус аяһындай бал киҫеп ала.* Ж. Кейекбаев. **Дадан балауыҙы** табаҡлы әҙер балауыҙ. **Дадан балы** ҡыуған бал. **Дадан ябыуы** дадандың ҡапҡасы аҫтындағы ябыу.

**ДАИМ** [*ғәр.*] *с. кар.* **даими.** *Даим хәл. Даим хәрәкәт. Даим булыу.* // *Даим ырыуҙар ҡырылышҡан бик боронда.* «Бабсаҡ менән Күсәк». *Даим, даим сәғәт һайын иҫкә төшә көн һайын* (Халыҡ йырынан).

♦ **Бер даим** бер үк ваҡытта. *[Зәйтүн:] Икеһенең бер даим башын киҫеп, хансағыҙға апарып күрһәтәйемl* «Буҙйегет». **Һәр даим** һәр ваҡыт. *Улар [Ғариф менән Һәжәр] һәр даим хат яҙышып торҙолар.* И. Иасыри. *[Мифтах:] Иркенләр инем мин, әгәр иркем бығаулы булмаһаl Баш осомда һәр даим ҡоҙғондар уйнап тормаһаl* К. Мәргән.

● *Ҡатын булһаң даим бул.* Мәҡәл.

**ДАИМИ** [*ғәр.*] *с.* **1.** Һәр ваҡыттағы, туҡтауһыҙ, өҙлөкһөҙ булып торған. *Даими хәстәрлек. Даими күҙәтеп тороу.* // *Даими шөғөлләнеү.* ■ .. *Уның [Зөһрәнең] Ғафури менән хат алышыуҙары даими төҫ ала.* Ә. Ғафури.

**2.** Оҙаҡ ваҡытҡа тәғәйенләнгән, ваҡытлыса түгел. *Даими кадрҙар. Даими семинар. Даими лагерь булдырыу.* ■ *1916 йылда Бабич мәҙрәсәне тамамлап сыҡҡас, үҙенә берәй даими хеҙмәт урыны табыу маҡсаты менән Өфөлә тороп ҡалды.* С. Ҡудаш.

**3.** Үҙгәрмәй торған, үҙгәрешһеҙ. *Даими бер нәмә лә юҡ, бөтә нәмә аға, бөтә нәмә үҙгәрә бит, Хәмит дуҫ.* Н. Нәжми.

♦ **Даими армия** дәүләт тарафынан тыныс ваҡытта тотола торған армия. **Даими дәүмәл** *махс.* нимәнелер өйрәнеп тикшергәндә бер үк төрлө ҡала торған үҙгәрмәүсән дәүмәл. **Даими капитал** *эк.* капиталдың етештереү саралары булдырыуға киткән һәм үҙкиммәтен хеҙмәт барышында үҙгәртмәй торған өлөшө. **Даими ток**

*физ.* үҙ йүнәлешен, көсөн үҙгәртмәй торған электр тогы.

**ДАИМИЛЫҠ** *и.* Даими булған хәл. *Даимилыҡҡа королоу. Кеше тәнендәге температураның даимилығы.*

**ДАИМӘ(Н)** [*ғәр.*] *р. иҫк. кит.* Һәр ваҡыт. *Улар [ҡаҙаҡтар] менән даимә әҙәби нәмәләр һөйләп .. уларҙан думбыра сирттереп көн үткәрә инем.* М. Ғафури.

**ДАИР** [*ғәр.*] *бәйл. иҫк. кит.* Берәр нәмәгә ҡағылышлы, бәйләнешле, шуға ҡараған. *Эшкә даир мәсьәләләр.* ■ *Хәсби әбей был урмандарҙың бөтөүенә даир әллә ни саҡлы аңлатмалар бирә.* М. Ғафури.

**ДАИРӘ** [*ғәр.*] *и. кит.* **1.** Ниҙелер эсенә алған киңлек; тирә-йүн, мөхит, урата. *Аң даирәһе. Ҡараш даирәһе.* ■ *Әҙәбиәт милли тел, милли традициялар даирәһенән тыш тыуа ла, йәшәй ҙә алмай.* Ә. Хакимов. *Һәр кем үҙенең көсө һәм ирке даирәһендә үҙенә — үҙе идара итергә хаҡлы.* Ғ. Хәйри.

**2.** Эш, профессия, ҡараштары уртаҡ булған кешеләр төркөмө. *Ғалимдар даирәһе. Хөкүмәт даирәһе. Бер даирә кешеләре.*

**ДАЙСА** *и. тар.* **1.** Башҡорттағы волость, ауыл общиналарының ер биләмәһе. *Юрматы дайсаһы. Табын дайсаһы. Дайса бүлеү.*

**2.** Хужалыҡ урыны. *Мөршиҙә әбей [карты үлгәс] .. ҡыҙына күсеп сыҡты. Уның йорто урынына .. Закир исемле кеше өй һалды. Шунан бирле әбей элекке дайсаһын төштәрендә күрер булып китте.* Б. Рафиҡов.

**ДАКТИЛОЛОГИЯ** [*рус.* ⟨ *гр.*] *и.* Һаңғырау һәм телһеҙҙәрҙең бармаҡтар ярҙамында һөйләшә торған махсус телмәр төрө.

**ДАКТИЛОСКОПИЯ** [*рус.* ⟨ *гр.*] *и.* Криминалистика ғилеменең енәйәтсенең шәхесен билдәләү маҡсатында бармаҡ биттәрендәге һыҙарҙы өйрәнеү бүлеге.

**ДАКТИЛЬ** [*рус.* ⟨ *гр.*] *и. әҙ.* Силлабо-тоник шиғыр төҙөлөшөндәге баҫымы беренсе ижекҡә төшә торған өс ижекле стопа. *Хорей, дактиль кеүек шиғыр үлсәмдәре башҡорт шиғырҙарына хас түгел.* Й. Гәрәй.

**ДАЛА** *и.* Тауһыҙ, урманһыҙ, ғәҙәттә үлән менән ҡапланған, ҙур майҙанды биләгән тигеҙ, иркен, асыҡ ер; ялан. *Иркен дала. Йәйрәп ятҡан дала. Киң дала. Осһоҙ-ҡырыйһыҙ дала. Дала еле. Дала ҡошо. Дала үҫемлектәре. Дала гиҙеү.* ■ *Был ауылдарҙың тирә-яғы ҡола дала. Яҡын-тирәлә һис бер ауыл юҡ.* Ғ. Дәүләтшин. *Бар ине далаларҙа йөрөгән ваҡыт, ер сигенә сыға алмай һыныбыҙ ҡатып* (Бәйеттән). **Урманлы дала** урыны-урыны менән ағаслығы булған дала.

● *Ана күңеле балала, бала күңеле далала.* Мәҡәл.

**ДАЛАЙ** *р. кар.* **талай.** *Бер далай киткәс.*

**ДАЛАЙ-ЛАМА** [*рус.* ⟨ *монг.*] *и.* Тибеттағы лама дине сиркәүендә беренсе рухани (15 быуаттан бирле).

**ДАЛАМАН** *и. иҫк. кит.* Хәрби кейем; гусарҙар мундиры. *Килешле кәүҙәһенә уның [Әгәлимовтың] даламаны тағы ла һөйкөмлөк бирә ине.* А. Таһиров.

**ДАЛАН** *и.* Тормоштағы уңыш, бәхет. *Даланы бар. Даланы юҡ. Далан асылды.* ■ *[Әүбәкер:] Бына беҙ, далан булмағас, байый алмайбыҙ бит әле.* Ж. Кейекбаев.

**ДАЛАНЛЫ** *с.* Эштә, тормошта уңышы булған, даланы бар, бәхетле. *Даланлы кеше. Даланлы булыу.*

**ДАЛАНЛЫЛЫҠ** *и.* Эштә, тормошта уңышы булған хәл, бәхетлелек. *Уның даланлылығына хайран ҡалам.*

**ДАЛАНҺЫҘ** *с.* Эштә, тормошта уңышы булмаған, даланы юҡ, бәхетһеҙ. *Даланһыҙ кеше. Даланһыҙ булыу.*

**ДАЛАНҺЫҘЛЫҠ** *и.* Эштә, тормошта уңышы булмаған хәл, бәхетһеҙлек. *Пичужкин үҙен .. рәнйетелгән, ҡыйырһытылған кеше тип хис итте, даланһыҙлығына көйөп алды.* А. Мағазов.

**ДАЛ-ДАЛ: дал-дал ҡылыу** емереү, тар-мар итеү. *[Мәсем:] Хоҙай кушһа, яуыҙды дал-дал ҡылып, башына заман ахыр һалығыҙ, тим.* «Бабсаҡ менән Күсәк».

**ДАЛИҒА** [*ғәр.*] *и. иҫк.* Яҙмыш, өлөш. *Кешеләрҙән кеше һис кәм түгел, бер далиға, бәхет тиң түгел* (Халыҡ йырынан).

**ДАЛИӘ** [*ғәр.*] *и. иҫк.* Бәхәсләшеүсе, бәхәсләшергә ятраҡан кеше. *Белмәйһең мәртәбәи ғалиәһен, нигә һин [Мәржәни] шулай артыҡ далиәһең?* Аҡмулла.

**ДАЛИЯ** *и. диал.* Бағау.

**ДАЛЫЙЫУ** *к. диал.* Тайпылыу.— *Аҙашмаһаң ярар ине лә. Буран бик көслө. Әллә ҡайҙа далыйып сығып китерһең, тип ҡурҡам.* Ғ. Дәүләтшин.

**ДАЛЬТОНИЗМ** [*рус.* < *ингл.*] *и.* Күҙҙең ҡайһы бер төҫтәрҙе айыра алмай торған күреү етешһеҙлеге.

**ДАЛЬТОНИК** *и. һөйл.* Дальтонизм менән яфаланған кеше.

**ДАМ** [*рус.* дамка] *и.* Шашка уйынында: ҡаршы яҡ майҙанындағы шаҡмаҡтарҙың төпкө рәтенә еткерелеп, шаҡмаҡтарҙа теләгәнсә йөрөргә хоҡуҡ алған шашка. *Дамға сығыу. Дам менән йөрөү.*

**ДАМ: дам итеү** *һөйл.* өмөт итеү, өмөтләнеү. *Һаман минән көлдәк дам итәһеңме, кейҙерермен.*

**ДАМА** [*рус.* ⟨ *фр.*] *и.* **1.** Тансала кавалер менән бейегән ҡатын-ҡыҙ.

**2.** Кәрт уйынындағы ҡатын һүрәте төшөрөлгән кәрт. *Ҡарға дама.*

**ДАМБА** [*рус.* ⟨ *гол.*] *и.* Һыуһаҡлағыстарҙы быуыу һәм төрлө ерҙәрҙе һыу баҫыуҙан һаҡлау һ. б. өсөн нимәнәндер өйөп яһалған гидротехник ҡоролма. *Бейек дамба. Тимер юл дамбаһы. Дамба яһау.* ■ *Йылғаның ситкә йәйелгән урындарына, тармаҡтарына ҡырсын таштар менән дамба яһарға кәрәк.* Ғ. Ибраһимов. .. *Егет барҙы һаман һуҡмаҡ менән дамба буйынан, бейек ҡом өйөмө өҫтөнән.* Ғ. Сәләм.

**ДАМБАҠ** *и. кар.* **тампаҡ.** *Дамбаҡтан яһалған балдаҡ. // Дамбаҡ беләҙек. Дамбаҡ биҙрә.* ■ *Банат ҡыҙының сәсен һыйпаны ла .. алъяпҡысы менән дамбаҡ самауырын һөртөп алды.* Й. Гәрәй.

**ДАМБАЛ** *и. диал.* Киң төплө, оҙон балаҡлы ҡулдан тегелгән ыштан. *Өс ана ҡулында йәтим ҡалдым, .. өҫтөмдә керле күлдәк, йыртыҡ дамбал.* Аҡмулла.

**ДАМБУР** [*рус.* тамбур ⟨*фр.*⟩ *и.* Сиратылғаи ҡалын сигеү ебе; тамбур. *Дамбур менән сигеү.* ■ *[Һалдат] ундағы [яулыҡтағы] йәшел дамбур ебе менән яҙылған «Ғәлиә» тигән һүҙгә оҙаҡ итеп ҡарап торҙо.* Ғ. Ибраһимов. **Дамбур энәһе** башы ырғаҡлы сигеү энәһе.

**ДАМБЫ** *и. диал.* Күпертмә биҙәк. *Ваҡ дамбы. Эре дамбы.*

**ДАМБЫЛЫ** *с.* Дамбы төшөрөлгән. *Гөлниса дамбылы шәл ябынған.* Ғ. Хөсәйенов.

**ДАМБЫР** *оҡш.* Эсе ҡыуыш ҡаты нәмәгә икенсе ҡаты нәмә һуғылғанда яңғырап сыҡҡан тауышты белдергән һүҙ. *Дамбыр итеү. Дамбыр итеп ҡалыу.*

**ДАМБЫР-ДОМБОР** *оҡш.* Ҡабат-ҡабат дамбыр иткән тауышты белдергән һүҙ. *Дамбыр-домбор итеү.* ■ *.. Пионерҙар колоннаһы күренә: — Дамбыр-домбор, .. дом-дом! Улар барабан ыңғайына бер тигеҙ өҙә баҫып киләләр.* З. Биишева.

**ДАМБЫРЛАТЫУ** *к.* Дамбыр иткән тауыш сығарыу. *Дамбырлатып барабан ҡағалар.*

**ДАМБЫРЛАУ** *к.* Дамбыр иткән тауыш сығыу. *Эре ямғыр ҡыйыҡты дамбырлата.*

**ДАМОЛЛА** [*фарс.*] *и. иҫк.* Мәҙрәсә тотоп, дәрес биреүсе мулла. *Мантиҡсы Шәймәрҙән дамолла сығарылып, уның урынына .. Баҡыев тигән берәү ҡуйылды.* Ғ. Ғүмәр.

**ДАН**[1] *и.* **1.** Ниндәйҙер өлкәләге батырлыҡ, хеҙмәт, һөнәр, талант һ. б. ҡаҙаныштар һөҙөмтәһендә бөтә халыҡ араһына таралған маҡтау һүҙе, хөрмәтле таныҡлыҡ, шөһрәт. *Батырлыҡ даны. Хеҙмәт даны. Даны ҙур. Даны бар. Дан алыу. Даны булыу. Данға күмеү. Даны таралыу.* ■ *Коммунистар партияһы — Ватандың даны, ул илтә тормош яҙына бөтә донъяны.* А. Игебаев. *Беҙҙең борон-борондан быуындан-быуынға күсеп килгән данлыбыҙ бар. .. Беҙҙең үткән юлыбыҙ дан менән күмелгән. Беҙҙе — Салауат батыр тоҡомо, тиҙәр.* М. Тажи. *Әбйәлилдә яҡшы аттар үрсетәләр икән. Ә егеттәренең зирәклек һәм ҡыйыулыҡ менән тирә-яҡта дандары таралған, ти* (Әкиәттән). *Салауат батыр үҙе китһә лә даны ҡалды тыуған илендә* (Халыҡ йырынан). / Кем йәки нәмә тураһында булған ниндәйҙер фекер. *Ҡурайсы тигән даны бар.* **Дан алыу** маҡтаулы эш һ. б. яҡшылыҡ йәки киреһенсә насарлыҡ менән илдә танылыу, шул исем менән халыҡ араһында билдәле булыу. *Дошман ҡырған Бүгәсәү. Һуғышта алған дан менән Яйыҡҡа еткән Бүгәсәү.* Салауат Юлаев. *Борон бер Мәсем атлы хал булған, ти. Үҙе гәййәр, тәкәббер бер йән булған, ти. Яуыҙлығы, байлығы берҙәй булып, шуның менән тирә-яҡта дан алған, ти.* «Бабсаҡ менән Күсәк». *Дошман килһә тупһаға, йортоң эсе таралыр. Йорт-иленән туймаған яуға сығып дан алыр* (Ҡобайырҙан). **Данға сығыу** данлыҡлы исеме алыу. *Ырыуҙың халыҡтары туп булған, ти, коралдары ҡылыс менән уҡ булған, ти, дүрт ырыуҙың батырҙары сыҡҡан данға.* «Бабсаҡ менән Күсәк». **Дан артынан ҡыуыу** кеше араһында билдәле, данлы булырға тырышыу, төп маҡсатты дан алыуға йүнәлтеү. **Дан йырлау** кемделер, нәмәнелер ныҡ маҡтап яҙыу йәки һөйләү. *Дан йырланһын яҡшы атҡа, затлы ирғә, ҙур шәмгә, тик күп йырланһын донъяны алып барған әҙәмгә.* М. Кәрим. **Дан ҡаҙаныу** *ҡар.* **дан алыу.** *Башҡорт шиғыры, башҡорт музыкаһы, башҡорт бейеүе беҙҙең көндәрҙә бөтә донъя күләмендә дан ҡаҙанды.* Ғ. Әмири. **Дан сығыу** маҡтаулы исеме йәки яманаты таралыу. *Уралдың ен-бәрейен барыһын баш эйҙергән, эймәһә — баш ҡыйҙырған даны сыҡҡан ҡылыс ул* (Ҡобайырҙан). **Данын сығарыу** маҡтаулы исемен йәки яманатын кеше араһына таратыу. *[Түрәбай:] Күрше-күләнгә инһәм арыуҙар, ер һелкетеп торалар,— тип даныбыҙҙы сығарҙым. Ошо йәшемә етеп, берәүҙең дә гәйбәтен һатып йөрөгәнем юк..* Т. Хәйбуллин. **Дан тотоу** нимәменәндер билдәле, данлыҡлы булыу. *Батырлыҡ менән дан тотоу. Дан тотҡан көрәшсе. Уңғанлыҡ менән дан тотоу.* ■ *Ҡалалар бик күп донъяла, ләкин Мәскәү бер генә. Мәскәүе менән дан тота беҙҙең тыуған ил генә.* Р. Ниғмәти. .. *Таҡмаҡ әйтеүҙә, шуға ҡушып биҙрә төбө һуғыуҙа дан тотҡан Бәҙерниса бөтәһенең иғтибарын үҙенә борған.* Т. Хәйбуллин. **Дан һатыу** насар исем, насар эш, яманат менән кеше араһында билдәлелек алыу; исемеңде быссратыу. *Дан һатып йөрөү. Кеше данын һатыу. Иптәштәреңдең данын һатма, һәйбәт бул.*

**2.** *с. мәғ.* Бик шәп, бик яҡшы, бик һәйбәт. *Дан егет. Дан кеше. Дан күлдәк. Дан булыу. Дан итеү. Байрамды дан итеп үткәреү. // Дан йәшәү.* ■ *Бында бик хөрриәт.. Мал аҫрау өсөн дан инде.* Р. Солтангәрәев. *Батырҙарым бар минең, аҡылдарым дан минең. Типһә тимер өҙөрҙәй батырҙарым бар минең.* Р. Ниғмәти. *Дан уйнайыҡ дуҫтар, дан көләйек һөйгән генә дуҫтар килгәндә* (Халыҡ йырынан).

**3.** Кемделер, нимәнелер маҡтап, хуплап әйтелә торған тантаиалы оран, маҡтау һүҙе. *Батырҙарға дан! Совет йәштәренә дан! Хеҙмәт батырҙарына дан!* ■ *Батыр түгел батыр яңғыҙ саҡта, ҙур дуҫлыҡта уның көс-даны. Данлайым мин тоғро дуҫтарымды, дан һиңә, дан — Башҡортостаным!* Р. Ғарипов.

● *Ағас ботаҡһыҙ булмаҫ, дан уртаҡһыҙ булмаҫ.* Мәҡәл. *Ат даны егет ҡулында, егет даны үҙ ҡулында.* Мәҡәл. *Ата даны менән һүҙ үтер.* Әйтем. *Батыр үҙе үлһә лә даны үлмәй.* Әйтем. *Даның сыҡҡан менән йәнең сыҡһын.* Әйтем. *Егет күрке дан менән.* Әйтем. *Яҡшыларҙан зат ҡалыр, батырҙарҙан дан ҡалыр.* Әйтем.

**ДАН**[2] [*рус.* дань] *и. тар. ҡар.* **яһаҡ**[1]. *Ул ваҡыттарҙа [16 быуатта] көн башындағы башҡорттар Ҡазан ханына дан түләйҙәр ине.* Ф. Вәлиев.

**ДАНА**[1] [*фарс.*] *и.* Һандар һәм һандарҙы белдергән һүҙҙәр менән: бер төрлө нәмәләрҙең береһе; бөртөк. *Бер дана. Биш дана дәфтәр. Күп дана. Китаптың тиражы ун мең дана.* ■ *Ул [Зөһрә] баҙарға сығып, күлдәклек алды, бер генә дана булһа ла күлдәк текте.* М. Ғафури.

**ДАНА**[2] [*фарс.*] *с. иҫк.* Уҡымышлы, белемле, аҡлы. *Дана булыу. // Әй, аҙамат ололар, уҙамандар, ағалар, камил тыуған даналар* (Ҡобайырҙан).

● *Бала бирһәң, дана бир, дана бирмәһәң, ала бир.* Мәҡәл.

**ДАНАЛАУ** *к.* Дана[1] итеп бүлеү; берәмләү, бөртөкләү. *Даналап бүлеп сығыу. Даналап һатыла торған тауарҙар.*

**ДАНАЛЫ** *с.* Дана[1] менән бүленгән; бөртөклө. *Даналы нәмә. Даналы тауар. Тауарҙың даналы хаҡы.*

**ДАНИШМӘН** [*фарс.*] *и. иҫк. кит.* Ҙур уҡымышлы кеше, аҡыл, ғилем эйәһе. *Әй Уралым, Уралым! .. Мәйтәм бабам ер биләп, данишмән булып торған ер* (Ҡобайырҙан). *// Һаҡланһын данишмән ир яман дуҫтан. Наҙан дуҫ бер айлыҡ, дуҫ төбө — дошман.* Аҡмулла.

**ДАНҠ** *и. иҫк. ҡар.* **дан**[1] 1. *Ҡурай ҡукрәкле халҡым, һин минең данҡым. Һөйәм һине, һөйәм!* Д. Юлтый.

**ДАНЛАНЫУ** *к. төш. ҡар.* **данлау.** *Йырҙарҙа данланған Урал.*

**ДАНЛАУ** *к.* Кемдең йәки ниҙеңдер данын таратыу; маҡтау. *Батырҙарҙы данлау. Ватанды данлау. Данлап йырлау. Данлап һөйләү.* ■ *Күгәреп күккә үрелгән ҡарлы башын Уралдың, күҙҙең яуын алырҙай матурлығын ҡырҙарҙың мәңге маҡтар инем мин, мәңге данлар инем мин.* Салауат.

**ДАНЛЫ** *с.* Дан ҡаҙанған; атаҡлы. *Данлы батырлыҡ. Данлы хеҙмәт.* ■ *Бүгәсәү ҙә менән ай Салауат Әрәсәйҙең данлы егете* (Халыҡ йырынан).

**ДАНЛЫҠЛАУ** *к. ҡар.* **данлау.** *Кемдәр күрмәгән Мәскәүҙе, улар күрергә теләй; кемдәр күргән, ғүмер буйы уны данлыҡлап һөйләй.* Р. Ниғмәти.

**ДАНЛЫҠЛЫ** *с.* **1.** Исеме танылған; атаҡлы, шөһрәтле. *Данлыҡлы кешеләр.* / Даны киң таралған, маҡтауға лайыҡ булған. .. *Ырымбурҙан килгән ерән, Суран буйының данлыҡлы йүгереге тимер күк ат, тағы ла мин танымаған ике-өс ат күренә.* Д. Юлтый.

**2.** Әһәмиәте ҙур булған, мөһим. *Данлыҡлы ваҡиға. Данлыҡлы көндәр.*

**ДАНПӘРӘСТ** [*фарс.*] *и. иҫк.* Дан яратыусы, данһөйәр. *Ғисмәтуллин шалтырауыҡ, ялтырауыҡ, данпәрәст.* Ш. Бабич.

**ДАНСАН** *с. диал.* Яҡшы, һәйбәт. *Дансан ҡала.*

**ДАНҺӨЙӘР** *и.* Дан яратҡан кеше. *Данһөйәр булыу.*

**ДАН-ШӨҺРӘТ** *и. йыйн.* Дан һәм шөһрәт. *Дан-шөһрәт алыу.* ■ *Дан-шөһрәт ул шундай бейек ҡая — болоттарға йәйгән ҡоласын: йылан уға тик шыуышып менә, бел талпынып менә ыласын!* Р. Ғарипов.

**ДАҢ** *оҡш.* Ҡалынырак тимер нәмәгә һуҡҡанда, ҙур ҡыңғырау ҡаҡҡанда сыҡҡан тауышты белдергән һүҙ. *Даң итеү.* ■ *Стена сәғәте даң итеп һуҡты. Зәбирә ҡайтып инде.* С. Агиш.

**ДАҢҒЫЛДАТЫУ** *к.* Даң-доң иттереү. *Даңғылдатып тимер ҡағыу.*

**ДАҢҒЫЛДАУ** *к.* Даң-доң итеү. *Даңғылдаған тимер тауышы.*

**ДАҢҒЫР** *оҡш.* Ҡаты юлдан буш арба барғанда, эсе ҡыуыш ҙур нәмә ҡатыға бәрелгәндә һ. б. сыҡҡан тауышты белдергән һүҙ. *Даңғыр итеү.*

**ДАҢҒЫР-ДОҢҒОР, даңғыр ҙа доңғор** *оҡш.* Ҡабат-ҡабат даңғыр иткән тауышты белдергән һүҙ. *Даңғыр-доңғор итеү.* ■ *— Биҙрәгә һары картуфты даңғыр-доңғор ташлайым.* К. Кинйәбулатова.

**ДАҢҒЫРЛАТЫУ** *к.* Даңғыр-доңғор иттереү. *Мискәне даңғырлатып тәгәрәтеү.*

**ДАҢҒЫРЛАУ** *к.* Даңғыр-доңғор итеү, даңғыр-доңғор килеү.

**ДАҢ-ДОҢ, даң да доң** *оҡш.* Ҡабат-ҡабат даң иткән тауышты белдергән һүҙ. *Даң-доң итеү.* ■ *Сиркәүҙең даң-доң, даң-доң килеп яңғыраған еҙ ҡыңғырауҙары тауышы баҫылыуға кемдер .. ҡапҡаны дөбөрләтергә тотондо.* Я. Хамматов. *Ул арала булмай даң да доң итеп һабан төрәне ҡағырға тотондолар.* В. Исхаҡов.

**ДАҢҠ** *оҡш.* Ҡалын ҡаты нәмәгә ҡаты нәмә менән ныҡ һуҡҡанда, бәрелгәндә сыҡҡан тауышты белдергән һүҙ. *Даңҡ итеү.* ■ *Самолёт Өфөгә килеп тә еткән икән, ул посадкаға түбәнәйә башланы. Бына тәгәрмәс даңҡ итеп ергә һуғылды.* Ғ. Шәрипов. *Кәмәбеҙҙең мороно яр ситенә туҡтатып ҡуйылған һал ҡабырғаһына даңҡ итеп барып бәрелде.* Т. Йәнәби.

**ДАҢҠ-ДОҢҠ, даңҡ та доңҡ** *оҡш.* Ҡабат-ҡабат даңҡ иткән тауышты белдергән һүҙ.

**ДАҢҠЫЛДАТЫУ** *к.* Даңҡ-доңҡ иттереү. *Даңҡылдатып ҡапҡа ҡағыу.*

**ДАҢҠЫЛДАУ** *к.* Даңҡ-доңҡ итеү.

**ДАР**[1] [*фарс.*] *и.*, **дар ағасы** Кешене аҫып үлтереү язаһын үтәү өсөн бер йәки ике бағана башына арҡыры ағас ҡуйып яһалған ҡоролма. *Дар ағасы. Дарға аҫыу.* ■ *Ҡарт Мадриттың ҡанлы майҙанында үлек кәүҙә дарҙа тирбәлә.* М. Кәримов.

**ДАР**[2] [*ғәр.*] *и. иҫк.* **1.** Ҙур йорт, бина.

**2.** Ер, ил.

**ДАРАЙ** *и.* Һуғанбаш үҫемлектәр ғаиләһенә ҡараған һыу төбөндә үҫә торған томбойоҡ кеүек үлән.

**ДАРАЙЛЫҠ** *и.* Һыу төбөндә дарай үҫкән урын. *Ҡамышлыҡтың кәҙерҙәрен ҡама менән ҡондоҙ белер, дарайлыҡтың кәҙерҙәрен баҡа менән йәйен белер* (Ҡобайырҙан).

**ДАРАН** *и. ҡар.* **таран**[1].

**ДАРБАҒАЙ** *и. диал.* Тәлмәрйен.

**ДАРВИНИЗМ** [*рус.* ⟨ *ингл.*] *и.* Тере тәбиғәттең тарихи үҫеше, хайуан һәм үҫемлек төрҙәренең тәбиғи һайланыш юлы менән барлыҡҡа килеүе тураһындағы тәғлимәт. *Дарвинизм нигеҙҙәре.*

**ДАРВИНИСТИК** *с.* Дарвинизмға нигеҙләнгән, дарвинизмға мөнәсәбәтле. *Дарвинистик ҡараш.*

**ДАРВИНСЫ** *и. кит.* Дарвинизм яҡлы кеше.

**ДАРГИН** *и.* Дағстан АССР-ында йәшәгән халыҡтарҙың береһе һәм шул халыҡтың бер кешеһе (кавказ телдәренең береһендә һөйләшә). *Даргин ҡатыны. Даргин теле.*

**ДАРДАР** *и.* Зэйтүн ағастар ғаиләһенә ҡараған ҡыйғас япраҡлы, ҡаты олонло бейек ағас (төрлө нәмә яһауҙа ҡулланыла); ҡорос ағас. *Беҙҙең ҡала урамдарында саған, йүкә, ҡайын, дардар үҫтерелә.*

**ДАРЕЛМӨҒӘЛЛИМИН** [*ғәр.*] *и. иҫк.* Ирҙәрҙән уҡытыусы әҙерләй торған уҡыу йорто.

**ДАРЕЛМӨҒӘЛЛИМӘТ** [*ғәр.*] *и. иҫк.* Ҡатын-ҡыҙҙарҙан уҡытыусы әҙерләй торған уҡыу йорто. *Был йорт — дарелмөғәллимәттең ятаҡханаһы, бында ҡатын-ҡыҙҙар ғына тора.* Ғ. Хәйри.

**ДАРЕЛФӨНҮН** [*ғәр.*] *и. иҫк.* Фәндәр йорто, юғары уҡыу йорто; университет. *Баҡыңыҙҙар! Был көндө һеҙ Яурупаға алға китеүгә былар тапты сара. Бина итеп дарелфөнүн, гимназия кешеләре хеҙмәт итә нисек, ҡара!* С. Яҡшығолов.

**ДАРЕЛХӘРЕБ** [*ғәр.*] *и. иҫк.* Һуғыш майҙаны, һуғыш ҡыры. *[Хәҙрәт:] Мин дарелхәребтә хәт һуғыуҙың дөрөҫ түгел икәнен беләм.* М. Ғафури.

**ДАРҠАР** [*фарс.*] *с. иҫк.* Ҡулланышта булған, кәрәккә яраған, кәрәкле булған. *[Ҡыҙ] ҡайғылы булып йөрөнө. Һәм табип дарҡарҙар ғилаж (дауа) тапманы.* «Буҙйегет».

● *Эт тиҙәге дарҡар булһа, донъяға сығыр.* Мәҡәл.

**ДАРЛАУ** *к. диал.* Дыулау.

**ДАРМАН** [*фарс.*] *и.* **1.** Кешенең физик эш башҡара алыу мөмкинлеге; көс, ҡеүәт, ҡарыу. *Дарман бар. Дарман бөттө. Дарман ҡороу.* ■ *Уҡырға дәрт бик ҙур булһа ла, дарман етмәне.* Б. Ишемғол.

**2.** *күсм.* Бер нәмәне хәл итер сара; әмәл, мөмкинлек. *Дарман бар. Дарман етмәү. Дарман табыу.* ■ *Дармандары юҡҡа дәртле егет йәш ғүмерен зая кисерә* (Халыҡ йырынан).

**3.** Ауырыу-сирҙе бөтөрә торған әмәл; дарыу. *Күсмәҫ хандың ауырыуына дарман табылманы.* «Ҡуҙыйкүрпәс менән Маянһылыу».

□ Дарман итеү дауалау. *Һарыбай хан .. әжәл түшәгенә йығыла. Ни тиклем дарман итеп ҡараһалар ҙа шәбәймәй.* «Ҡуҙыйкүрпәс менән Маянһылыу».

● *Байҙың эше фарман менән, ярлының дарман менән.* Мәҡәл.

**ДАРМАНА** *и.* Ҡыҫҡа тарбаҡ һабаҡлы, тетмәкәй япраҡлы, ҡатмарлы сәскәләләр ғаиләһенә ҡараған һары төймә сәскәле әсе үлән (бабасырҙан эсәләр).

**ДАРМАНҺЫҘ** *с.* Көсһөҙ, хәлһеҙ. *Дарманһыҙ кеше. Дарманһыҙ булыу. Дарманһыҙ ҡалыу.*

**ДАРСЫН** *и. ҡар.* **дәрсен.**

**ДАРҪ** *оҡш.* Ҙур ҡаты нәмәләр бер-береһенә бәрелгәндә сыҡҡан көслө, һаңғырау тауышты белдергән һүҙ. *Дарҫ итеү. Дарҫ итеп ҡалды.*

**ДАРҪ-ДОРҪ, дарҫ та дорҫ** *оҡш.* **1.** Ҡабат-ҡабат дарҫ иткән тауышты белдергән һүҙ. *Дарҫ-дорҫ итеү. Дарҫ-дорҫ булып йөрөү.*

**2.** *күсм.* Йөрәктең көслө, ҡаты һуғыуын белдергән һүҙ. *Йөрәге дарҫ-дорҫ тибә.*

**ДАРҪЛАУ** *к. ҡар.* **дарһылдау.** *Снарядтар тегендә-бында төшөп, дарҫлап ярыла.* Ә. Моратов. *[Ҡояштың] йөрәге, күкрәген ярып сығырҙай булып, дарҫлап тибә.* Я. Вәлиев.

**ДАРУҒА** [*монг.*] *и. тар.* Уртаса ҙурлыҡтағы административ-территориаль берәмек; өлкә. *Мәскәү батшаһы Башҡортостанды дүрт даруғаға [Ҡазан, Ноғай, Аса, Себер] бүлеп идара итә башланы.* Ғ. Фәхретдинов.

**ДАРХАН** *и.* **1.** *иҫк.* Оҫта, тимерсе.

**2.** *ҡар.* **тархан.** *Һарыбайсал дархан да батыр йөрәкле аҡһаҡалдар араһында ҙур абруйлы, тоғролоғо менән дан ҡаҙанып кеше булған, тиҙәр.* Ғ. Ибраһимов.

● *Ат яҡшыһы арҡанда, ир яҡшыһы дарханда.* Мәҡәл.

**ДАРХӘЛ** [*фарс.*] *р. иҫк.* Шул ваҡытта, шул хәлдә, шунда уҡ; ҡапыл, кисектергеһеҙ. *Урусов ҡарттарҙың үтенестәрен ҡара сырай менән ҡаршылап, дархәл аяҡ үрә торорға әмер биреп, тылмасына .. нотоҡто уҡырға ҡуша* (Хикәйәттән). *Бер яңы хәбәр булһа, дархәл сәселәләр.* Аҡмулла.

**ДАРҺ** *оҡш. ҡар.* **дарҫ.**

**ДАРҺЫЛДАТЫУ** *к.* Дарҫ-дорҫ иттереү, дарҫ-дорҫ иткән тауыш сығарыу.

**ДАРҺ-ДОРҺ** *оҡш. ҡар.* **дарҫ-дорҫ.** *Дарһ-дорһ итеү.* ■ *— Өлгөрөрбөҙ! — Сәйфулланың ашҡыныып дарһ-дорһ типкән йөрәге алҡымына килеп тығылғандай булды, тын алышы ҡыҫылды.* Я. Хамматов.

**ДАРҺЫЛДАТЫУ** *к.* Дарҫ-дорҫ иттереү, дарҫ-дорҫ иткән тауыш сығарыу.

**ДАРҺЫЛДАУ** *к.* **1.** Дарҫ итеү, дарҫ-дорҫ итеү. *Утлы яуға мин атылдым .. дарһылдағас бомба һәм туптары.* Б. Вәлит.

**2.** *күсм.* Көслө, ҡаты һуғыу (йөрәк тибешенә ҡарата). *Минең өнөм быуыла, йөрәгем атылып сығырҙай булып, дарһылдап тибә ине.* С. Кулибай. *[Муса] .. газетаны уҡып ҡарағас, йөрәге дарһылдап китте, маңлайына эҫе тир бәреп сыҡты ...* З. Ураксин.

**ДАРЪЯ** [*фарс.*] *и.* **1.** Сиге күренмәгән ҙур һыу. *Ер шарының биштән дүрт өлөшө һыу менән ҡапланған. Иге-сиге юҡ ул даръяның.* М. Хисмәтов. *Тормош — икһеҙ-сикһеҙ даръя.* М. Тажи.

**2.** Бик ҙур йылға. *Нисек ышанаһың даръяға? Гел тулҡынлана ул, гел аға.* М. Кәрим. *Даръя һыуҡайҙарын үтә алмай бүленеп тора әрме көстәре* (Халыҡ йырынан).

**3.** *күсм.* Ниҙеңдер күплеге, сикһеҙлеге. *Беҙҙә саф выждан лы, яҡшы кешеләр даръя.* Я. Вәлиев.

◆ **Күҙ даръя** күп нәмәне (тейешен дә, тейеш түгелен дә) күреү тураһында әйтелә. *Әлеге әйткәндәй, күҙ тигәнең даръя бит ул. Кәрәген дә, кәрәкмәгәнен дә күрә.* «Совет Башҡортостаны», 1977, 12 ноябрь.

● *Һыу һыуға ҡойор, һыу даръяға ҡойор.* Мәҡәл.

**ДАРЫ** *и.* Снаряд һәм патрон эсенә һалына торған шартлатҡыс матдә. *Дары йәшниге. Дары һауыты.* ■ *Ул [егет] алға атланы. Кинәт шул саҡ, тынлыҡ емереп, дары шартланы.* Ғ. Сәләм. **Аҡ дары** төтөнһөҙ дары. **Ҡара дары** төтөнлө дары. **Дары мөгөҙө** мөгөҙҙән яһалған боронғо дары һауыты.

◆ **Дары еҫен еҫкәү** һуғыштың эсендә булыу.

● *Дарыһы коро, һүҙе туры.* Мәҡәл.

**ДАРЫУ** [*фарс.*] *и.* Ауырыуҙы, сирҙе бөтөрөү, дауаланыу өсөн ҡулланыла торған шыйыҡ йәки онтаҡ хәлдәге матдә; дауа. *Баш дарыуы. Йоҡо*

*дарыуы. Йөрәк дарыуы. Күҙ дарыуы. Эс дарыуы. Онтаҡ дарыу. Дарыу үләндәре. Дарыу һөртөү. Дарыу эсеү. Дарыу яһау.* ■ *Хәҙерге көндә бал, балауыҙ, ҡорт ағыуы, ҡорт елеме, ҡорт һөттәренән төрлө-төрлө дарыу эшләйҙәр.* «Ағиҙел», 1967, № 3.

◆ **Әжәл дарыуы** бик кәрәк һәм үҙе бик әҙ нәмәгә ҡарата әйтелә. *Күпселек баҫыуҙарҙа ҡый үләндәрен әжәл дарыуы итеп әҙләһәң дә таба алмаҫһың.* Ю. Әхмәҙиев.

● *Күп һүҙҙең дарыуы — бер һүҙ.* Мәҡәл.

**ДАРЫУЛАНЫУ** *ҡ.* Ауырыуҙы бөтөрөү өсөн дарыу менән файҙаланыу; дауаланыу. *Эш эшләп ҡыш буйына киттем арып, өс аҙна яттым бында дауаланып.* М. Ғафури.

**ДАРЫУЛАТЫУ** *ҡ. йөкм. ҡар.* **дарыулау.**

**ДАРЫУЛАУ** *ҡ.* Ауырыуҙан шәбәйтер өсөн дарыу биреү; дауалау. *Дарыулап шәбәйтеү.* ■ *Вася күҙҙәрен асып врачҡа ҡараны ла: — .. Һеҙ минең тәнемде дарыулайһығыҙ,.. ҙур рәхмәт әйтәм,— тине.* Һ. Дәүләтшина.

**ДАСТАН** [*фарс.*] *и.* Шиғыр менән яҙылған ҙур күләмле эпик әҫәр. *Гуруғлы дастаны. Ләйлә вә Мәжнүн дастаны.* ■ *Нарт эпосының, Гуруғлы, Алпамыштар тураһындағы дастандарҙың бер нисә телдә таралыуы һәм йәшәп килеүе лә мөһим бер тарихи, эстетик фактор итеп ҡаралырға тейеш.* Ә. Хәкимов.

**ДАТ** [1] *и.* Данияның төп халҡын тәшкил иткән милләт һәм шул милләттең бер кешеһе (герман телдәренең береһендә һөйләшә). *Дат халҡы. Дат ҡатыны. Дат теле.*

**ДАТ** [2] [*фарс.*] *и. иҫк.* **1.** Тоғролоҡ; ғәҙеллек. // *Илдең башына кем етте? Илдең датһыҙ бейҙәре, түргә сыҡмаҫ түрәләр — шул етте ау, шул етте* (Ҡобайырҙан). *Ун өс тигәс тә ни яман? Датһыҙ йыйған мал яман* (Ҡобайырҙан).

**2.** Ҡоһор, үс, нәфрәт. *Ҡараҡөлөмбәт [Шыҡманайҙы] ҡыуып килеп, был тере ҡалһа, ҡасан да булһа ата датын һәм ҡанын эстәр һәм алыр, тип .. [уны] үлтерҙе.* «Башҡорт шәжәрәләре», 1960.

**3.** Әрнеү, зар. *Аҫылды һуҡҡан менән аты китмәҫ, күңелдән яман һүҙҙең даты китмәҫ.* Аҡмулла.

**ДА́ТА** [*рус.* ⟨ *фр.*] *и.* Берәй ваҡиғаның билдәле календарь ваҡыты. *Тарихи дата.* ■ *22 апрель — иҫтәлекле дата. Уны бөтә прогрессив кешелек донъяһы йыл һайын билдәләп үтә.* «Башҡортостан уҡытыусыһы», 1966, № 4. / Берәй документ, хат, эш ҡағыҙы һ. б. яҙылған, эшләнгән ваҡытын күрһәткән билдә, яҙма. *Датаны күрһәтеү. Дата ҡуйыу. Датаһын яҙыу.*

**ДАТАЛАНЫУ** *ҡ. төш. ҡар.* **даталау.**

**ДАТАЛАУ** *ҡ.* Датаны ҡуйыу, датаһын яҙыу, күрһәтеү. *Документты даталау.* / Ниҙеңдер датаһын асыҡлау. *Археологик ҡомартҡыны даталау.*

**ДАТЧАН** *и. ҡар.* **дат** [1].

**ДАУ** *и.* **1.** Дәғүәле талаш, ыҙғыш. *Дау ҡубыу. Дау сығарыу.* ■ *Ҡыш буйы ер бүлеү хаҡында ауылдарҙа дау барҙы.— Ерҙе хәйерсегә бирәбеҙме инде? — Бирәбеҙ.— Улар нишләтә уны?..* Ф. Иҫәнғолов. *Батырмын тип кем әйтмәй — яу килгәндә йүне юҡ, сәсәнмен тип кем әйтмәй — дау килгәндә өнө юҡ* (Ҡобайырҙан).

**2.** Шау-шыулы оло талаш, әрләш. *Дау ҡуптарыу. Дау сығарыу.* ■ *Арғы биттә таш ҡутара Сонайым, ике бисә дау ҡуптара, Сонайым* (Халыҡ йырынан).

● *Дауға барғанса, яуға бар.* Әйтем.

**ДАУА** [1] [*ғәр.*] *и.* **1.** Ауырыуҙы, сирҙе бөтөрөү өсөн ҡулланыла торған шифалы нәмә; дарыу. *Дауа үләне. Баш дауаһы. Дауа яһау. Дауа ярҙамында йүнәлеү.* ■ *Тап сәскә ваҡытында йыйып, ҡарағат япрағы менән ҡуша ҡайнатҡан мәтрүшкә етмеш төрлө ауырыуҙан дауа.* Б. Бикбай.

**2.** *күсм.* Төрлө ауыр хәлдә, күңелһеҙлектә бөтөрөүгә ярҙам итә торған сара, әмәл. *Дауа булыу. Дауаһын табыу.* ■ *Һинең менән бер һөйләшеү [Хаят] дәртҡә дауа.* Ш. Бабич. *Йомшаҡ, йылы, иркә май һауаһы — талған йөрәктәрҙең дауаһы* Ғ. Амантай.

□ **Дауа итеү** дауалау.

● *Дәртһеҙгә дауа юҡ.* Әйтем. *Саф һауа — тәнгә дауа.* Әйтем.

**ДАУА** [2] [*ғәр.*] *и.* Ашыҡ уйынында ашыҡтың салҡан әйләнеп ятҡан хәле. *Хан алсы уйнағанда ашыҡтарҙы бүлеп алалар. Һуңынан бергә ҡушып һибеп ебәрәләр ҙә, ашыҡтарҙың ятышына ҡарап, алсыһын алсы менән, бөгәһен бөгә менән, сигәһен сигә менән, дауаһын дауа менән парлап алалар* (Хикәйәттән).

**ДАУА-ДАРМАН** [*ғәр.* + *фарс.*] *и. йыйн.* Төрлө дауалау саралары.

□ **Дауа-дарман итеү** дауалау.

**ДАУАЛАНЫУ** *ҡ.* Ауырыуҙан шәбәйер өсөн дауа менән файҙаланыу; дарыуланыу. *Больницала дауаланыу. Дауалана башлау. Дауаланып сығыу.* ■ *Врачтар уға [Зыяға] ҡымыҙ эсеп дауаланырға кәңәш бирҙеләр.* М. Тажи.

**ДАУАЛАНЫУСЫ** *и.* Дарыу ҡабул итеп, дауаланып йөрөгән кеше. *Дауаланыусылар корпусы.*

**ДАУАЛАТЫУ** *ҡ. йөкм. ҡар.* **дауалау.**

**ДАУАЛАУ** *ҡ.* Ауырыуҙан шәбәйтер өсөн дауа биреү; дарыулау. *Йөрәкте дауалау. Теште дауалау. Ҡымыҙ менән дауалау. Дауалау гимнастикаһы. Дауалау саралары. Дауалау учреждениеһы.*

**ДАУАЛАУСЫ** *и.* Ауырыуҙы дауалаған, дауалау эше менән шөғөлләнгән врач. *Дауалаусы врач.*

**ДАУАМ** [*ғәр.*] *и.* **1.** Эш-хәрәкәт, процесс, хәл-ваҡиғаның ваҡыт эсендәге һуҙымы. *Эш көнөнөң дауамы һигеҙ сәғәт.*

**2.** Бөтмәй өҙөлгән нәмәнең артабанғы һуҙымы. *Романдың дауамы бар.* ■ *Беҙҙең ғүмер дауамы уларҙа [балаларҙа].* Ғ. Сәләм.

□ **Дауам итеү** 1) башланған эш, хәл һ. б. тамамланмай артабан барыу, һуҙылыу. *Уҡыу дауам итте. Ял дауам итә;* 2) бөтөрмәй һаҡлау, артабан да йәшәтеү. *Традицияларҙы дауам итеү. Уҡыуҙы дауам итеү. Яҡшы ғөрөф-ғәҙәттәр дауам итә.* ■ *Атайым ҡартайһа ла, һаман кешегә ялланып бесән саба, ураҡ ура, таш келәттәр һалыуын дауам итә.* Т. Йәнәби. **Дауам иттереү** *ҡар.* **дауам итеү** 2.

**ДАУАМЛАУ** *ҡ.* Дауам итеү. *Эште дауамлау.* ■ *Баш күтәреп киттек дауамларға бөтөрә алмай ҡалған эштәрҙе.* М. Марат.

**ДАУАМЛЫ** *с.* Ваҡыт эсендә һуҙылған, оҙайлы. *Дауамлы эш. Яҙғы сәсеү эштәре дауамлы һәм ентекле әҙерлек талап итә.*

**ДАУАСЫ** *и.* Ауырыуҙы, сирҙе билдәләп, бөтөрөү сараһын күргән кеше, дауалаусы врач.

**ДАУАХАНА** [*ғәр.* + *фарс.*] *и.* Ауырыуҙы дауалай торған йорт. *Һыу дауаханаһы яҡшы эшләй, ауырыуҙарҙы нәүбәт көттөрөп интектермәй.* «Совет Башҡортостаны», 1966, 22 июнь.

**ДАУКӘР** *и. иҫк.* Даусы.

**ДАУЛАТЫУ** *к. йөкм. кар.* **даулау.**

**ДАУЛАУ** *к.* **1.** Дәғүәләп, талап итеп көрәшеү; яулау. *Ер даулау. Ирек даулау. Хоҡуҡ даулау.* ■ *Ир Салауат сапкан яуҙарга. Ир улдары менән ирек даулап, каршы барган батша, байҙарга.* Ҡ. Даян. *Азатлыкты һорап алмайҙар, баһадирҙар уны даулайҙар.* М. Сөндөклө.

**2.** Һорап, талап итеп ныҡышыу. *[Кыҙ — һәүбәнгә:] Егеткәйем, шаулама, атым һорап даулама.* «Аҡбуҙат».

**ДАУЛАШТЫРЫУ** *к. йөкм. кар.* **даулашыу.** *Кешене даулаштырып, шаулашып йөрөйҙәр.*

**ДАУЛАШЫУ** *к.* **1.** Үҙ-ара дәғүәләшеп талашыу; тартышыу. *Бер ҡуй өсөн ике кеше даулашып, икеһе ҡуйҙың ике колагынан тотоп, судка китеп барганда, мулла осраган* (Көләмәстән).

**2.** Үҙ-ара талашып шаулашыу. *Даулаша-даулаша таралыу.*

**ДАУЛАШЫУСЫ** *и.* Даулашҡан кеше; даусы. *Мәрйәм — етем, йәш кыҙ, ундай-бындайҙы белмәҫ, һатып ебәрһәң дә һис бер даулашыусы юк.* М. Ғафури.

**ДАУЛЫ** *с.* **1.** Талаш-тартышлы, бәхәсле. *Даулы мәсьәлә. Даулы урын.*

**2.** Ҙур ваҡиғаларға бай, тынғыһыҙ шаушыулы. *Даулы көндәр.* ■ *Йәшәп булмай гел ҡауышып ҡына походлы һәм даулы заманда.* М. Кәрим.

**ДАУСЫ** *и.* **1.** Ниҙер дәғүәләп тартышҡан кеше; дәғүәсе. *Бабай үлгәс, мал өсөн ике агайэне даулашып киткән. Даусылар ең-яга килешеп, казыйга барган* (Әкиәттән).

**2.** Шау-шыу, талаш ҡуптарған кеше; ғауғасы.

**ДАУСЫЛ** *с.* Даулашып, дәғүәләшеп йөрөүсән. *Даусыл кешеләр.* / Шау-шыу, талаш ҡуптарыусан. *Йоклап яткан иреңде тор-торлама, киленсәк. Телсәнләнеп, кыскырып, даусыл булма, киленсәк* (Туй йырынан).

**ДАУЫЛ** *и.* **1.** Бик ныҡ көслө емергес яман ел. *Дауыл ҡубыу. Дауыл сығыу. Дауыл баҫылыу.* ■ *Дала дауылы бигерәк көслө була, ҡарт имәндең тамырын ҡуптара.* Б. Ишемғол.

**2.** *күсм.* Илде күтәргән шаулы, төрлө төрлө ҙур тарихи ваҡиға. *Революция дауылы.* ■ *Атаһы шул дауылдар эсендә, көрәштә корбан булган.* Б. Хәсән. *Бер көн көслө дауыл күтәрелде .. ул йәйелде бөтә илдәргә.* Х. Ҡунаҡбай.

♦ **Дауыл ҡошо** кәкре суҡышлы, оҙон тар ҡанатлы йөҙгөс диңгеҙ ҡошо. *Бында Горький уйҙар уйлай .. Ул, гүйә, донъя өҫтөнә сакыра дауыл кошон.* Р. Ниғмәти.

**ДАУЫЛЛАНЫУ** *к. кар.* **дауыллау.** *Дауылланып күкрәп болот килде, тетрәп торҙо дала буйҙары.* М. Кәрим.

**ДАУЫЛЛАУ** *к.* **1.** Дауыллы (1 мәғ.) булыу. *Дауыллап ямгыр яуа.* ■ *Әй дауыллай диңгеҙ!.. Тойола уга ярҙары ла хатта тар булып.* М. Сиражи.

**2.** *күсм.* Илде шау-гөр килтергән төрлө ваҡиғалы, тынғыһыҙ, тынысһыҙ булыу, ғауғалы булыу. *Йә бер тынып, йә бер дауыллап, үтә гүмер һәм ул үтәсәк.* Н. Нәжми.

**ДАУЫЛЛЫ** *с.* **1.** Дауыл (1 мәғ.) булған, дауыл менән бергә ҡатыш. *Дауыллы көн. Дауыллы ямгыр.* ■ *Шып баҫылды ҡом дауыллы ел, буран. Алды тынлыҡ донъяны ..* Ш. Бабич.

**2.** *күсм.* Йәмғиәт тормошо тарихи, ҙур ваҡиғаларға бай, тынғыһыҙ. *Дауыллы йылдар.* ■ *Заман ни тиклем оло, ни тиклем дауыллы һәм ҡатмарлы булһа, шагир ҙа шундай оло була ала.* Ғ. Рамазанов. / *күсм.* Шау-шыулы, талаш-тартышлы. *Дауыллы йыйылыш.*

**3.** *шигр.* Шашҡын, тыныссыҙ, ташып торған. *Дауыллы хистәр. Дауыллы күңел.*

**ДАУЫРА: дауыра һалыу** *диал.* янау.

**ДАУЫРҒЫУ** *к. диал.* Дәртләнеү.

**ДА́ФНИЯ** [*рус.*] *и. зоол.* Сөсө һыуҙа йәшәй торған һыу бөрсәһенең бер төрө (промысла балыҡтарының төп аҙығы булып тора).

**ДАХА** [*рус.* доха] *и.* **1.** Йөнөн тышҡа һәм эскә ҡуйып теккән тун.

**2.** *иҫк. кар.* **яға** 1.

**ДАҺА** (дәһә) *киҫ. һөйл. шул уҡ* **да баһа** *кар.* **да** [2]. *Ул ҡайтҡан даһа.*

**ДАҺИ** [*ғәр.*] *и.* **1.** Үтә зирәк аҡыллы, ғәҙәттән тыш ижади һәләтле кеше. // *Даһи аҡыл.* ■ *Бында даһи Ленин йоклай мавзолей тигән өйҙә.* Р. Ниғмәти. *Мин даһи! Йөрөмәм үҙемде кәм тотоп, тергеҙәм үлгән йөрәкте ант итеп.* Ш. Бабич. *Даһи уйың, даһи фекерең менән хаҡлыҡ эҙен таптың, астың һин.* Д. Юлтый.

**2.** (*баш хәреф менән*) Ир-ат исеме.

**ДАҺИАНӘ** [*ғәр.*] *р. иҫк. кит.* Даһиҙарса. *Даһианә һөйләү.*

**ДАҺИЛЫҠ** *и.* Даһи, бөйөк кешегә хас сифаттар, даһи булыу хәле.

**ДАҺЫР** *окш.* Күк күкрәгәндә, күмәк хәрәкәт ваҡытында йәки ҡаты ҙур нәмә ерҙән тәгәрләгәндә һ. б. сыҡҡан тауышты белдергән һүҙ. *Даһыр итеү. Даһыр итеп ҡалыу.*

**ДАҺЫР-ДОҺОР, даһыр ҙа доһор** *окш.* Ҡабат-ҡабат даһыр иткән тауыш. *Даһыр-доһор итеү. Даһыр-доһор килеү.* ■ *Тейәгән йөгө даһыр-доһор барган машина урамдан үткәндә, тәҙрәләр дер һелкенеп, колаҡ тоноп ҡала.* М. Хисмәтов.

**ДАҺЫРЛАТЫУ** *к.* Даһыр-доһор иттереү. *Куперҙең йомро бүрәнәләренән даһырлатып сыҡҡанда Әхмәтгәленең башы әйләнеп китте.* Р. Низамов. *Бүре малды өркөтөп, даһырлатып алып килеп, кәртәгә индереп ебәрә* (Әкиәттән).

**ДАҺЫРЛАУ** *к.* Даһыр-доһор итеү. *Даһырлап мискә тәгәрләп китте.* ■ *[Муса] шунда уҡ даһырлап өй башына менеп китте.* З. Ураҡсин.

**ДА́ЧА** [1] [*рус.*] *и.* Ҡаланан ситтәге йәй тора, ял итә торған йорт. *Дачала тороу. Дача төҙөү.*

**ДА́ЧА** [2] [*рус.*] *и.* Айырым бер урман хужалығы. *Урман дачаһы.*

**ДВИГАТЕЛЬ** [*рус.*] *и.* Берәр төрлө энергияһы механик энергияға әйләндереп, нимәнәлер хәрәкәткә килтерә торған машина. *Реактив двигатель. Эске яғыулыҡлы двигатель. Электр двигателе. Эске яныулы двигатель. Автомобиль двигателе.* ■ *Һыуыҡтан автобустың двигателе туҡтанманы. Тормоздар туңды.* Р. Солтангәрәев.

**ДВИЖО́К** [*рус.*] *и. һөйл.* Күсереп йөрөтмәле бәләкәй двигатель. *Ҡайҙалыр яҡында ғына дөпөлдәгән движоктың тауышы һүлпәнәйеп тора ла, кемдер уны ҡыҫтаған һымаҡ тағы көсәйтә.* Ә. Вәли.

**ДВОР** [1] [*рус.*] *и. тар.* Монархияға ҡоролғаи илдәрҙә монарх һәм уиың яҡындары, даирәһе (2 мәғ.). *Батша дворы.*

**ДВОР** [2] [*рус.*] *и. һөйл.* Колхоз, совхоздағы мал һарайҙары һәм хужалыҡ ҡаралтыларының ишек алды. *Колхоз дворы.* / Йорттоң ишек алды. *Мин янған бер өйҙөң дворына индем.* С. Кулибай.

◆ **Постоялый двор** *һөйл. иҫк.* атлы юлсылар өсөн ҡуналҡа йорто. *Беҙ постоялый дворға табан аттарыбыҙҙы борҙоҡ.* Д. Юлтый.

**ДВОРЕ́Ц** [*рус.*] *и.* **1.** *кар.* **һарай** [1].

**2.** *кар.* **пулат.**

**ДВО́РНИК** [*рус.*] *и.* Ҡалала йорт тирәһен, ишек алдын, тратуарҙарҙы ҡарап, таҙартып торған кеше. *Дворниктар ком бураны осороп, ҡапҡа төптәрен, урамдарҙы һепереп йөрөй.* Ғ. Ғүмәр.

**ДВОРЯН** [*рус.* дворянин] *и.* Феодаль һәм капиталистик йәмғиәттәрҙә дәрәжәле түрәләрҙән тороп, иҙеүсе синыфты тәшкил иткән ер биләүсе ҡатлам кешеһе; алпауыт. *Эре дворян. Ваҡ дворяндар. Дворяндар Россияла хакимлек иткән синыф булған.* ■ *Крәҫтиәндәрҙең ерҙәре булмаһа, иректәре бармы һуң? Ул да юҡ. Улар һаман баярҙар, дворяндар, земский начальниктар .. һәм шулар кеүек башҡа түрәләр ҡулында тора.* Һ. Дәүләтшина.

**ДВОРЯ́НКА** [*рус.*] *и.* Дворян ҡатын-ҡыҙы.

**ДЕБАРКА́ДЕР** [*рус.* ⟨*фр.*] *и.* Һыу өҫтөнә йөҙҙөрөп ҡуйылған пароход пристане. *Дебаркадерҙың баҫмаһын тартып алдылар. Пароход мыҙылып ҡына ярҙан ситләшә башланы.* М. Тажи.

**ДЕБАТ** [*рус.* дебаты ⟨*фр.*] *и. кит. ғәҙәттә күпл.* Йыйылыштағы фекер алышыуҙар, бәхәстәр. *Дебатҡа ҡушылыу. Дебаттар башланды. Парламент дебаттары.*

**ДЕБЕТ** *и.* Кәзәнең шырт йөнө аҫтындағы мамығы; кәзә мамығы. *Дебет орсоғо. Дебет тарау. Дебет аялау. Дебет иләү. Дебет сиратыу.* // *Дебет шарф. Дебет шәл бәйләү.* ■ *Башҡортостандың .. Урал артында һәр кәзәнән йылына 800 грамға тиклем дебет тарап алына.* М. Хисмәтов. .. *Кескәй Йәнеш йоклай. Тайба әбей дебет аялап ултыра ине.* З. Биишева. **Дебет кәзәһе** күп һәм яҡшы дебет бирә торған тоҡомло кәзә. **Йоҡлаған дебет** *шул уҡ* **эрегән дебет. Эрегән дебет** оҙаҡ ятыу йәки ваҡытында тарап алмау сәбәпле ойошоп, сифаты насарланған дебет. *Эрегән дебет шәлгә ярамай.*

**ДЕ́БЕТ** [*рус.* ⟨*лат.*] *и. бухг.* Керем-сығым кенәгәһенең бөтә алған нәмәне, шуға бәйле бурыс һәм сығымдарҙы яҙа торған һул яҡ бите; *киреһе* кредит. *Дебетка яҙыу.*

**ДЕБЕТЛӘҮ** *к.* Дебет ҡушыу. *Дебетләп шарф бәйләү.*

**ДЕБИ́Т** [*рус.* ⟨*фр.*] *и. махс.* Сығанаҡтағы һыу, нефть, газ кеүек нәмәнең бер ваҡыт берәмегә эсендә килгән миҡдары, күләме. *Тәүлек дебит. Юғары дебит менән эшләү. Скважинаның дебиты. Аҙ дебитлы. Күп дебитлы.* ■ *Нефть сығарыуҙы арттырыу, һәр скважинаның нормаль дебитын тәьмин итеү ҡатламда тейешле баҫым булдырыуға бәйләнгән.* «Совет Башҡортостаны», 1976, 28 февраль.

**ДЕБИТО́Р** [*рус.* ⟨ *лат.*] *и. бухг.* Бирәсәге булған, бурыслы кеше йәки ойошма.

**ДЕБЮ́Т** [*рус.* ⟨ *фр.*] *и.* **1.** Артистың сәхнәләге беренсе сығышы. / Ҡайһылыр өлкәләге беренсе сығыш. *Йәш яҙыусының дебюты. Дебют яһау.*

**2.** Шахмат, шашка уйынында йөрөй башлау. *Ферзя дебюты.*

**ДЕБЮТА́НТ** [*рус.* ⟨*фр.*] *и.* Тәү тапҡыр сығыш яһаған кеше (сәхнәлә, спортта һ.б.). *[Ҡарт] скрипканы эйәк аҫтына ҡуйғас, күп халыҡ алдында сығып баҫҡан дебютант һымаҡ, мәһабәт .. киәфәт менән: — Моцарттың .. сонатаһы..— тине.* А. Карнай.

**ДЕВАЛЬВА́ЦИЯ** [*рус.* ⟨*нем.*] *и.* Капиталистик илдәрҙә: закон ҡабул итеү юлы менән милли аҡса берәмегенең алтын ҡиммәтен кәметеү йәки билдәле бер ил валютаһының рәсми курсын алтынға, көмөшкә йәки берәй сит ил валютаһына ҡарата түбәнәйтеүҙән ғибәрәт аҡса реформалары үткәреүҙең бер ысулы.

**ДЕВАЛЬВАЦИЯЛАНЫУ** *к. төш. кар.* **девальвациялау.**

**ДЕВАЛЬВАЦИЯЛАУ** *к.* Девальвация үткәреү; аҡса берәмектәренең ҡиммәтен рәсми төшөрөү. *Долларҙы девальвациялау.*

**ДЕВИ́З** [*рус.* ⟨*фр.*] *и.* Эш, тормоштағы төп идея, маҡсатты сағылдырған өндәмә рәүешендәге ҡыҫҡа һүҙ. *«Һәр ваҡыт әҙер!» — ул пионерҙар девизы.* ■ *К. Маркстың: «Бөтә донъя пролетарийҙары берләшегеҙ!» — тигән өндәмәһе эшселәр хәрәкәтенең ялҡынлы девизы булды.* «Совет Башҡортостаны», 1968, 6 май.

**ДЕВО́Н** [*рус.*] *и.* Ерҙең геологик тарихында палеозой дәүеренең дүртенсе осоро. *Девон аҫты ҡатламдары тип, Көнбайыш Башкортостанда девондан түбәндә ятҡан ҡалын ҡатламдарҙы әйтәләр.* Ҡ. Тимерғазин. *Өфө ҡалаһына яҡын районарҙа девон нефтенең яңы ятыштары табылды.* Д. Бураҡаев.

**ДЕГАЗА́ТОР** [*рус.*] *и.* **1.** Дегазация үткәрә торған аппарат.

**2.** Дегазация үткәреү өсөн ҡулланылған зарарһыҙландырыусы матдә.

**3.** Дегазация үткәреүсе.

**ДЕГАЗА́ЦИЯ** [*рус.*] *и.* Ағыуланған ерҙең, кейем-һалым һ. б. нәмәнең зарарһыҙландырылыуы йәки зарарһыҙланыуы.

**ДЕГАЗАЦИЯЛАУ** *к. кар.* **зарарһыҙландырыу.**

**ДЕГЕ-ДЕГЕ** *сакр. диал.* Геле-геле.

**ДЕГЕНЕРА́Т** [*рус.* ⟨*лат.*] *и.* Нәҫелдән килгән ыңғай биологик һәм психик сифаттарҙы юғалтҡан йәки юғалта башлаған кеше.

**ДЕҒЕНЕРАТИВ** [*рус.* дегенеративный] *с.* Дегенерацияға бәйле. *Дегенератив үҙгәреш.*

**ДЕГЕНЕРА́ЦИЯ** [*рус.* ⟨*фр.*] *и.* **1.** Организмдың биологик һәм психик яҡтан насарайыуы; тоҡомдоң боҙолоуы.

**2.** *биол.* Тере организмдарҙа күҙәнәк һәм органдарҙың (ағзаларҙың) тарҡалышы, боҙола барыуы.

**ДЕГЕТ** [*рус.* дёготь] *и.* Ғәҙәттә ҡайын туҙы, торф йәки таш күмерҙән ҡыуып алынған ҡуйы ҡара еҫле шыйыҡлыҡ. *Ҡайын дегете. Дегет күнәге. Дегет ҡайнатыу.* ■ *Еҫе аңҡып торған дегет менән арба көпсәктәрен майлаһыҡ.* Й. Солтанов. *Аҡбулат ҡарт гүмер буйы .. туҙ һыҙырған да дегет ҡыуған, ерек ырҡҡан да күмер үртәгән* (Әкиәттән). **Дегет баҙы** дегет ҡайната торған урын. **Дегет силәге** 1) дегет һалып, арбаға тағып йөрөй торған силәк; 2) *күсм.* башҡаларға эйәреп йөрөй торған, ихтыярһыҙ кешегә ҡарата әйтелә. **Дегет һымаҡ (***йәки* **кеүек)** үтә ныҡ ҡара, ялтырап торған (төҫкә ҡарата). *Дегет һымаҡ ҡара.* ■ *Егеттең дегет һымаҡ ҡара сәстәре кепкаһынан сығып, маңлайына төшкән.* Р. Солтангәрәев. **Сайыр дегете** *шул уҡ* **шүшмен дегете. Таҙа дегет** туҙҙан ҡайнатылған дегет .. *Ҡайын урманының урта төшөндә .. байҙың туҙҙан таҙа дегет ҡайната торған өс баҙы булған.* Н. Мусин. **Туҙ дегете** *шул уҡ* **таҙа дегет. Шүшмен дегете** ҡайын туҙы менән ҡарағай тамыры ҡушып эшләнгән дегет. *Таҙа дегет туҙҙан эшләнә. Ә ҡарағай сайырынан ҡайнатылғаны шүшмен дегете булып сыға, хаҡы осһоҙ тора.* С. Кулибай.

● *Ҡатынды кеше иткән егет, арбаны яҡшы иткән дегет.* Әйтем. *Таҡһаң, дегет силәге лә Өфөнән әйләнеп ҡайта.* Әйтем.

**ДЕГЕТЛӘНЕҮ** *к. төш. ҡар.* **дегетләү.** *Дегетләнгән тәгәрмәс.*

**ДЕҒЕТЛӘҮ** *к.* Дегет һөртөү, дегет менән майлау. *[Зилский] ҡамыт, сбруйҙар, .. бөлдөргәләрҙе яңы ҡайыштан яһатып, уларҙы дегетләп ҡуйған.* Ғ. Дәүләтшин. / Дегеткә бысратыу, дегеткә буяу. *Кейемде дегетләү.*

**ДЕГЕТСЕ** *и.* Дегет ҡыуыусы, дегет ҡайнатыусы. *Ул [Хәжгәлиев] дегет ҡайнатҡан утарҙа аҙна самаһы йәшәгәс, дегетсе картты уятты: — Мин китәм, ылау әҙерлә.* Я. Хамматов.

**ДЕГРАДА́ЦИЯ** [*рус.* ⟨*фр.*] *и.* Яҡшы, ҡиммәтле, ыңғай сифаттарҙың әкренләп юғала, боҙола, кәмей барыуы.

**ДЕГРАДАЦИЯЛАНЫУ** *к.* Деградацияға дусар булыу.

**ДЕГУСТА́ТОР** [*рус.*] *и.* Дегустация белгесе.

**ДЕГУСТА́ЦИЯ** [*рус.* ⟨*фр.*] *и.* Ашамлыҡ, эсемлекте әҙерләгәндә төҫөнә, тәменә, еҫенә һ. б. ҡарап сифатын билдәләү эше. *Дегустация үткәреү. Дегустация яһау.*

**ДЕГУСТАЦИЯЛАНЫУ** *к. төш. ҡар.* **дегустациялау.**

**ДЕГУСТАЦИЯЛАУ** *к.* Дегустация яһау, дегустация үткәреү. *Конфетты дегустациялау. Сәйҙе дегустациялау. Хушбыйҙы дегустациялау.*

**ДЕГӘНӘК** *и.* **1.** Эре киң япраҡлы, һандал сәскәле, йәбешкәк тубалсаҡлы сәнскеле үҫемлек һәм уның йәбешкәк тумалаҡ орлоғо. *Дегәнәк йәбешкән. Дегәнәк япрағы. Дегәнәк тамыры.* ■ *«Дегәнәк сәскә атһа, бал бешә»,— тип атайымдың әйткәне күңелгә һеңеп ҡалған ..* Ш. Янбаев. *Дегәнәк аттарҙың ялына, ҡойроғона һырый. Йылҡы малы утлауҙан ялы кейеҙ кеүек ҡайтып инә. Ә ҡойроҡтары дегәнәк һырығанлыҡтан, тубал тағып ебәргән кеүек.* Ж. Кейекбаев / *күсм.* Кешегә йәбешеп, һырлығып барған кешегә ҡарата әйтелә.

**2.** *диал.* Әлморон.

**ДЕДУКТИВ** [*рус.* **дедуктивный**] *с. лог.* Дедукцияға нигеҙле, дедукцияға мөнәсәбәтле. *Дедуктив ысул.*

**ДЕДУ́КЦИЯ** [*рус.* ⟨*лат.*] *и. лог.* Дөйөмдән айырымға ҡайта торған фекер ысулы, дөйөмдән сығып яһалған логик һығымта; *киреһе* индукция .. *Ҡайһы бер әҙиптәребеҙ дедукция менән, йәғни «дөйөмдән конкретҡа килеү» принцибы менән саманан тыш мауығып китә.* К. Әхмәтйәнов.

**ДЕЖУР** [1] [*рус.* дежурный ⟨*фр.*] *с.* **1.** Ниндәйҙер ижтимағи вазифаны йәки хеҙмәтте сиратлап үтәгән. *Дежур врач.* / Ниндәйҙер эште, хеҙмәтте бүтәндәрҙең ялы ваҡытында үтәгән. *Дежур аптека. Дежур поликлиника. Дежур магазин.*

**2.** Кәрәк саҡта тиҙ генә файҙаланыр өсөн әҙер торған. *Дежур машина.* ■ *[Күсәрбаев] Хамматовтың пожарныйҙа торған дежур атын егергә сыкты.* Д. Исламов. / *күсм.* Һәр саҡ ҡулланыла, файҙалана торған. *Дежур фразалар. Дежур цитаталар. Дежур һүҙҙәр ҡулланыу.*

**3.** *и. мәг.* Сиратлы вазифаны йәки хеҙмәтте башҡарған кеше. *Дежур булыу. Класс дежуры. Станция дежуры.*

□ **Дежур итеү** дежурлыҡ вазифаһын үтәү, дежур булыу. *Агитпункттарҙа агитаторҙар дежур итә.*

**ДЕЖУР** [2] [*рус.* дежурство] *и.* Сиратлап башҡарылған ижтимағи вазифа йәки эш. *Дежурҙа булыу. Дежурҙа тороу.*

**ДЕЖУРЛЫҠ** *и.* Дежур [2] эше. *Ул көнө дежур булманы. Кис менән костёр янында дежурлыҡ тураһында һөйләшеп, тәртип төҙөп ҡуйҙылар.* К. Мәргән.

**ДЕЖУ́РНЫЙ** [*рус.* ⟨*фр.*] *и. һөйл.* Ниндәйҙер вазифаны, эште сират тәртибендә башҡарыусы. *Дежурныйҙар булмаһе. Дежурный булыу.* ■ *Проверка һуңында ла .. дежурныйҙың һүҙенә ҡарамайынса [казармала] төнгө ун икегә тиклем шаулаштылар.* Д. Юлтый.

**ДЕЗАКТИВА́ЦИЯ** [*рус.* ⟨*фр.* + *лат.*] *и.* Ҡоролма һәм башҡа нәмәләрҙең өҫ яғы радиоактив матдәләрҙән таҙартылыуы.

**ДЕЗАКТИВАЦИЯЛАУ** *к.* Дезактивация яһау, дезактивация үткәреү. *Электростанция майҙанында .. ҡоролмаларҙы дезактивациялау, һыу яҡкылыҡтарын бысраныуҙан һаклау буйынса эштәр интенсив үткәрелә.* «Совет Башҡортостаны», 1986, 7 июнь.

**ДЕЗЕРТИ́Р** [*рус.* ⟨*фр.*] *и.* Хәрби хеҙмәттән ҡасып йөрөгән кеше. *Унда Австрия армияһы һуғыша, бындағыға ҡарағанда унда фронт йомшаҡ, тиҙәр. Ул яҡта дезертир күп, тиҙәр.*

Д. Юлтый. / Эштән, ижтимағи бурысты үтәүҙән ҡасҡан кеше. ... *Баҫһын инде гәҙел суд алдына вуз бөтөргән ошо дезертир!* Т. Арслан.

**ДЕЗЕРТИРЛЫҠ** *и.* Хәрби хеҙмәткәрҙең хәрби хеҙмәттән баш тартыу маҡсатында үҙ белдеге менән хәрби частан китеүе; армияға саҡырылыуҙан баш тартыуы. *Дезертирлыҡ итеү.* ■ *Башҡорт һалдаттары аҡ армиянан күмәк рәүештә дезертирлыҡ итә башланы.* Б. Юлдашбаев. / Үҙеңдең граждаилыҡ бурысыңды, хеҙмәт буйынса йәки ижтимағи вазифаларыңды үтәүҙән баш тартыу хәле.

**ДЕЗИНСЕКТА́ЛЬ** *и.* Көнкүрештә зарарлы бөжәктәрҙе бөтөрөү өсөн ҡулланылған ағыулы шыйыҡса. *Дезинсекталь һибеү. Дезинсекталь һөртөү.* ■ *Хәҙерге ваҡытта бөжәктәрҙе ҡырыу өсөн төрлө химик матдәләр: дезинсекталь, хлорофос,.. бура һ. б. ҡулланыла.* В. Ғүмәров.

**ДЕЗИНСЕ́КЦИЯ** [*рус.* ⟨ *фр.*] *и.* Махсус саралар менән зарарлы бөжәктәрҙе бөтөрөү эше. *Дезинсекция яһау. Кейемде дезинсекциянан үткәреү.*

**ДЕЗИНФЕ́КЦИЯ** [*рус.* ⟨ *фр.*] *и.* Йоғошло микробтарҙы махсус сара менән бөтөрөү эше. *Дезинфекция камераһы. Дезинфекция үткәреү. Дизенфекция яһау.*

**ДЕЗИНФЕКЦИЯЛАНЫУ** *ҡ. төш. ҡар.* **дезинфекциялау.** *Бүлмәләр яҡшы дезинфекцияланған.*

**ДЕЗИНФЕКЦИЯЛАУ** *ҡ.* Дезинфекция үткәреү, дезинфекция яһау; йоғошһоҙландырыу. *Ауырыуҙың кейемен дезинфекциялау. Һыуҙы дезинфекциялау. Мал торлағын дезинфекциялау.*

**ДЕЗИНФОРМА́ЦИЯ** [*рус.* ⟨ *фр.*] *и.* Кемделер бутау, унда яңылыш фекер тыуҙырыу өсөн (пресса, радионан һ. б.) таратылған ялған информация, хәбәр.

**ДЕЗИНФОРМАЦИЯЛАУ** *ҡ.* Кешене бутау, унда яңылыш фекер тыуҙырыу өсөн ялған информация, хәбәр таратыу.

**ДЕЗОДОРА́ТОР** [*рус.*] *и.* Дезодорация яһау сараһы йәки приборы. *Дезодоратор ҡулланыу.*

**ДЕЗОДОРА́ЦИЯ** [*рус.* ⟨ *фр.* + *лат.*] *и.* Төрлө химик матдәләр ярҙамында насар еҫте бөтөрөү сараһы. *Дезодорация яһау.*

**ДЕЗОКА́МЕРА** [*рус.*] *и.* Дезинфекция яһай торған махсус бүлмә йәки шкаф. *Бабай ашкынып торған бер атты етәкләп дезокамераға алып инеп китте.* И. Ғиззәтуллин.

**ДЕЗОРГАНИЗА́ТОР** [*рус.* ⟨ *фр.*] *и.* Дезорганизация яһаған, тәртипте боҙған кеше; болартыусы.

**ДЕЗОРГАНИЗА́ЦИЯ** [*рус.* ⟨ *фр.*] *и.* Берәй эштә, ойошмала һ. б. нормаль эшмәкәрлекте, тәртипте боҙоу, болартыу эше. *Дезорганизация яһау.*

**ДЕЙЗМ** [*рус.* ⟨ *лат.*] *и.* Донъяның яратылышы алланан, ләкин артабанғы тәбиғәт һәм хәл-ваҡиғаларҙың үҫеше алланан түгел, тип ҡараған (17—18 быуаттарҙа булған) дини-философик ҡараш.

**ДЕЙСТ** [*рус.*] *и.* Деизм яҡлы кеше.

**ДЕЙЕҮ** [*фарс.*] *и.*, **дейеү пәрейе** Әкиәттәге яуыз, яман мифик зат (Көнсығыш мифологияһында киң таралған). *Өс башлы дейеү. Ете башлы дейеү. Ун ике башлы дейеү. Дейеү батшаһы. Дейеү менән алышыу.* ■ *Урал .. ҡылыс һелтәгән һайын, дейеүҙең ун ике башының береһе ҡырҡылып төшө торҙо, ти* (Әкиәттән).

**ДЕК** [*рус.* ⟨ *ингл.*] *и. диңг.* Диңгеҙ йәки йылға карабының аҫмалы палубаһы.

**ДЕ́КА** [1] [*рус.* ⟨ *нем.*] *и.* Ҡайһы бер ҡыллы музыка ҡоралдарының тауышты көсәйтә торған өлөшө. *Пианино декаһы.*

**ДЕ́КА** [2] *а. х.* Ашлыҡ һуғыу машинаһыиың барабанына ҡаршы ҡуйылған тешле ҡуҙғалмай торған өлөшө. *Деканы асыу. Деканы көйләү.*

**ДЕКАБРИ́СТ** [*рус.*] *и.* 1825 йылдың 14 декабрендә восстание менән тамамланған дворяндар революцион-азатлыҡ хәрәкәтендә ҡатнашыусы. *Декабристар восстаниеһы.*

**ДЕКА́БРЬ** [*рус.* ⟨ *лат.*] *и.* Календарь йылының ун икенсе айы (*ҡар.* **календарь**). *Декабрь айы. Декабрь бураны. Егерме икенсе декабрҙә көндөң иң ҡыҫҡа һәм төндөң иң оҙон сағы була.* ■ *Был Сталинград өсөн ауыр көндәр декабрь айҙарында ине.* И. Абдуллин.

**ДЕКА́ДА** [*рус.* ⟨ *гр*] *и.* **1.** Ун көнгә тигеҙ ваҡыт, айҙың өстән бер өлөшө; ун көн. *Айҙың һуңғы декадаһы. Икенсе декада.*

**2.** Нимәгәлер арналған ун көнлөк. *Музыка декадаһы. Сәнғәт декадаһы.* ■ *1955 йылда Мәскәүҙә үткәрелгән Башкортостандың әҙәбиәт һәм сәнғәт декадаһы республиканың бөтә ижади хеҙмәткәрҙәре өсөн күренекле ваҡиға булды.* «Ағиҙел», 1965, № 7.

**ДЕКАДЕ́НТ** [*рус.*] *и.* Декадентлыҡ яҡлы кеше. *Декаденттар эстетикаһы. Декадент шәкирҙәр.*

**ДЕКАДЕНТЛЫҠ** *и.* 19 быуат аҙағы — 20 быуат башындағы әҙәбиәт һәм сәнғәттә булған өмөтһөҙлөк, тормоштан биҙеү, индивидуализм менән һуғарылған буржуаз, антиреалистик йүнәлештәрҙең дөйөм атамаһы. .. *Декадентлыҡ хәрәкәтенә, декадент яҙыусыларҙың һуғышты аҡлаусы .., мистика, өмөтһөҙлөк тойғоларына ҡапма-ҡаршы буларак, Сәйфи Ҡудаш поэзияһы демократик әҙәбиәт традициялары ерлегендә үҫте.* Ғ. Хөсәйенов.

**ДЕКАДЕНТСЫЛ** *с.* Декадентлыҡҡа ҡараған. .. *Төшөнкөлөктө, аҙғынлыҡты маҡтаған [капитализмдың] декадентсыл әҙәбиәт менән сәнғәте .. ҡара эшкә буйһондоролған.* Ғ. Хөсәйенов.

**ДЕКАЛИ́ТР** [*рус.* ⟨ *гр.*] *и.* Ун литрға һәм шуға тигеҙ булған шыйыҡлыҡ үлсәү берәмеге.

**ДЕКАМЕ́ТР** [*рус.* ⟨ *гр.*] *и.* Ун метрға тигеҙ булған оҙонлоҡ үлсәү берәмеге.

**ДЕКА́Н** [*рус.* ⟨ *лат.*] *и.* Юғары уҡыу йортонда факультет башында торған кеше. *Филология факультетының деканы. Декан булыу. Декан итеп ҡуйыу.*

**ДЕКАНА́Т** [*рус.*] *и.* Факультеттың декан етәкселегендәге административ-уҡыу идараһы. / Ошо идара урынлашҡан бүлмә йәки йорт. *Деканатҡа инеү.*

**ДЕКАТИРО́ВКА** [*рус.* ⟨ *фр.*] *и.* Йөн туҡыманы сифатын яҡшыртыу һәм ултырмаһын өсөн боҫ

йәки эҫе һыу менән эшкәртеү эше. *Декатировка яһау.*

**ДЕКАТИРОВКАЛАНЫУ** *к. төш. кар.* **декатировкалау.**

**ДЕКАТИРОВКАЛАУ** *к.* Йөн туҡыманы сифатын яҡшыртыу һәм ултырмаһын өсөн боҫ йәки эҫе һыу менән эшкәртеү.

**ДЕКА́ЭДР** [*рус.* ⟨ *гр.*] *и. мат.* Ун яҫылыҡ менән сикләнгән геометрик есем; ун яҡлы геометрик есем.

**ДЕКЛАМА́ТОР** [*рус.* ⟨ *лат.*] *и.* Нәфис һүҙ оҫтаһы, декламация һөйләүсе. *Декламатор булып сығыш яһау.*

**ДЕКЛАМА́ЦИЯ** [*рус.* ⟨ *лат.*] *и.* Нәфис әҙәбиәттең тасуири уҡылышы; шиғыр һәм прозаны тасуири әйтеү сәнғәте. *Декламация һөйләү. Декламация ятлау. Декламация һөйләүсе.* ■ *Кәйеф күтәрелде, өй эсен байрам төҫө алды. Индрил декламацияһына тотондо.* Д. Юлтый. *Мин халыҡтың күләп ебәреүенән ҡаушаным. Наиләләргә декламация һөйләү түгел был.* С. Агиш.

**ДЕКЛАРАТИВ** [*рус.* декларативный] *с.* **1.** Декларация (1 мәғ.) рәүешендәге; тантаналы рәсми. *Декларатив рәүештә әйтеп биреү. Декларатив белдереү.*

**2.** *кусм.* Артыҡ дөйөм һүҙҙән торған. *Декларатив телмәр.* ■ *Фекер башлыса шиғыр юлдарында яланғас көйө теҙелгән. Йөрәк һүҙе урынына күберәк декларатив хәбәрләү биләгән.* М. Ғәли.

**ДЕКЛАРАТИВЛЫҠ** *и.* Декларатив (2 мәғ.) рәүешкә ҡоролған хәл, күренеш. *Һәр деталде .. [шиғырҙа] оҫта файҙаланыу быға тиклем шиғриәттә йәшәп килгән декларативлыҡтан ҡотолоу мөмкинлеген бирә.* С. Әлибаев.

**ДЕКЛАРА́ЦИЯ** [*рус.* ⟨ *лат.*] *и.* **1.** Хөкүмәт, партия исеменән ниндәйҙер ҡараш йәки ҡарарҙың тантаналы рәүештә белдерелеүе һәм шул белдереү яҙылған ҡағыҙ. *Тыныслыҡ декларацияһы. Декларацияға ҡул ҡуйыу.*

**2.** Кәрәкле мәғлүмәттәр бирә торған ҡайһы бер рәсми документтарҙың атамаһы. *Сауҙа декларацияһы.*

**ДЕКЛИНА́ТОР** [*рус.*] *и.* Магнит ауышлығын билдәләй торған прибор.

**ДЕКОЛЬТЕ́** [*рус.* ⟨ *фр.*] *и.* Ҡатын-ҡыҙ күлдәгендә муйын, түш һәм арҡаны ныҡ күрһәтеп ҡуя торған асыҡ яға уйымы. *Ҙур декольте. Декольте яһап уйыу. Декольте яғалы күлдәк.* ■ *[Сәскә — Кәриповка:] Сабантуевтарҙа ҡунаҡта мин шундай .. декольте [яғалы күлдәктә] инем.* Ф. Иҫәнғолов.

**ДЕКОРАТИВ** [*рус.* декоративный] *с.* **1.** Нимәнелер матурлау, биҙәү маҡсатында хеҙмәт иткән. *Декоратив биҙәк. Декоратив үҫемлек. Декоратив туҡыма.* / Декорацияға (1 *мәғ.*) мөнәсәбәтле. *Декоратив сәнғәт.*

**2.** Төрлө һүрәт төшөрөп, матур итеп биҙәлгән. *Декоратив күренеш.*

**ДЕКОРА́ТОР** [*рус.*] *и.* **1.** Декорация эшләгән художник.

**2.** Йорттарҙы, йорт тирәләрен һ. б. биҙәүсе сәнғәт оҫтаһы, шул өлкәләге белгес.

**ДЕКОРА́ЦИЯ** [*рус.* ⟨ *фр.*] *и.* Сәхнәлә ҡуйыла торған пьесаның эстәлеген һүрәтләп яһалған яһалма күренеш һ. б. биҙәү нәмәләре. *Декорация ҡороу. Декорация яһау.* ■ *Шаршау асылып китте. Тамашасылар башта Урал тәбиғәтен кәүҙәләндергән декорацияға иғтибар иттеләр.* Ғ. Әмири.

**ДЕКОРАЦИЯЛАНЫУ** *к. төш. кар.* **декорациялау.**

**ДЕКОРАЦИЯЛАТЫУ** *к. йөкм. кар.* **декорациялау.**

**ДЕКОРАЦИЯЛАУ** *к.* Декорация менән биҙәү, декорация ҡуйыу.

**ДЕКРЕ́Т** [*рус.* ⟨ *лат.*] *и.* Юғарғы властың закон көсөндәге ҡарары; указ, закон. *Ер тураһындағы декрет.* ■ *1919 йылдың 23 мартында совет хөкүмәте В. И. Ленин ҡул ҡуйған декрет менән РСФСР составындағы тәүге автономиялы республика булған Башҡорт Автономиялы Социалистик Совет Республикаһын ойоштороу тураһында иғлан итте.* «Совет Башҡортостаны», 1964, 22 март.

◆ **Декрет отпускаһы** ауырлы ҡатындарға бирелә торған махсус отпуск. *Декрет отпускаһы алыу.* **Декретка сығыу** декрет отпускаһын алыу.

**ДЕКРЕТЛАШТЫРЫЛЫУ** *к. төш. кар.* **декретлаштырыу.**

**ДЕКРЕТЛАШТЫРЫУ** *к.* Декрет менән ныҡытыу, декрет менән законлаштырыу. *Реформаны декретлаштырыу.*

**ДЕКСТРИ́Н** [*рус.* ⟨ *фр.*] *и.* Промышленностың төрлө тармағында елем итеп ҡулланыла торған крахмалдан яһалған матдә.

**ДЕЛЕГА́Т** [*рус.*] *и.* Ойошма, коллектив һ. б. исеменән ҡайҙалыр һайланған йәки тәғәйенләнгән кеше; вәкил. *Делегат билеты. Делегат булыу. Делегат һайлау. Делегат итеү.* ■ *1917 йылдың июль айында Ырымбурҙа Беренсе Бөтә Башҡортостан съезы саҡырыла.* «Башҡортостан ҡыҙы», 1969, № 8.

**ДЕЛЕГА́ТКА** [*рус.*] *и.* Делегат ҡатын-ҡыҙ. *Делегатка булыу. Делегатка итеү.* ■ *Тәҙрә янына эшсе ҡатын-ҡыҙҙар араһында һайланып ҡуйылған делегатка Рәхимә килеп: —Фатима, йыйылышка кил! — тип ҡысҡырҙы.* Ш. Шәһәр.

**ДЕЛЕГАТЛЫҠ** *и.* Делегат булыу, делегат вазифаһы. *Делегатлыҡ мандаты.*

**ДЕЛЕГА́ЦИЯ** [*рус.* ⟨ *лат.*] *и.* Ниндәйҙер ойошма, коллектив, дәүләт һ. б. исеменән вәкил итеп ебәргән делегаттар төркөмө; вәкәләт. *Сит ил делегацияһы. Хөкүмәт делегацияһы. Эшселәр делегацияһы.* ■ *Съезд һуңында Ленин иптәш башҡорт делегацияһының бер өлөшөн үҙенә саҡырҙы.* Д. Юлтый.

**ДЕЛИКАТЕ́С** [*рус.* ⟨ *фр.*] *и.* Бик ҡәҙерле, тәмле тип һаналған затлы ашамлыҡ. *Көнбайыш королдәре табынында тарпан ите деликатес урынына йөрөгән.* Ғ. Хөсәйенов.

**ДЕ́ЛО** [*рус.*] *и.* Берәй хәл, факт йәки кеше тураһында тупланған документтар йыйымы. *Шәхси дело. Дело асыу. Делоға беркетеү.* ■ *Дело биттәрен аҡтарып, унда яҙылған юлдарҙы хәҙер яттан белһә лә .. һорауҙарға яуап таба алғаны юҡ әле уның* [*судьяның*]. Х. Зарипов.

**ДЕЛШАД** [*фарс.*] *с. иҫк. кит.* Риза, ҡәнәғәт; шат. **Делшад итеү** (*йәки* әйләү) ризалаштырыу,

ҡәнәғәтләндереү. *Был фәҡир бәндә фәнүн гилемдән үҙенең хазинаһында барынса уларға яуап бирмәк илә сәмахәт күрһәтеп, уларҙы иршад вә делшад әйләне.* «Батыршаның хаты».

**ДЕ́ЛЬТА** [1] [*рус.* ⟨ *гр.*] *и.* Тармаҡланып төшкән йылға тамағы. *Лена йылғаһының дельтаһы.*

**ДЕ́ЛЬТА** [2] [*рус.* ⟨ *гр.*] *и.* Грек алфавитында дүртенсе хәрефтең атамаһы.

**ДЕЛЬФИ́Н** [*рус.* ⟨ *гр.*] *и.* **1.** Тешле киттар төркөмөнөң дельфиндар ғаиләһенә ҡараған һөтимәр диңгеҙ хайуаны.

**2.** *спорт.* Йөҙөү ысулының бер төрө. *Дельфин ысулы менән йөҙөү.*

**ДЕЛЬФИНА́РИЙ** [*рус.*] *и.* Дельфиндарҙы өйрәнеү, уларҙы төрлө нәмәгә өйрәтеп, тамашасыға күрһәтеү өсөн тәғәйенләнгән диңгеҙ һыуы тултырылған ҙур аквариум.

**ДЕЛЯ́НКА** [*рус.*] *и. ҡар.* **диләнкә.**

**ДЕМАГО́Г** [*рус.*] *и.* Демагогия менән шөғөлләнгән кеше.

**ДЕМАГОГИК** *с.* Демагогияға ҡоролған, демагогтарға хас. *Демагогик вәғәҙә. Демагогик сығыш.*

**ДЕМАГО́ГИЯ** [*рус.* ⟨ *гр.*] *и.* Аҫтыртын маҡсатҡа ирешеү өсөн ике йөҙләнеп, ялған вәғәҙә, буш һүҙ менән аңһыҙ халыҡты алдаштырыу шөғөлө. *Демагогия менән шөғөлләнеү. Демагогия менән алдау.*

**ДЕМАРКА́ЦИЯ** [*рус.* ⟨ *фр.*] *и.* Ике йәнәш дәүләттең сиген билдәләп, уларҙы махсус билге ҡуйып күрһәтеү эше. *Демаркация яһау.*

♦ **Демаркация һыҙығы** 1) килешкән дәүерҙә ике яҡ ғәскәрҙе айырып торған һыҙыҡ; 2) еңелгән дәүләттең ерен оккупация зоналарына бүлгән һыҙыҡ.

**ДЕМАРКАЦИЯЛАУ** *к.* Демаркация үткәреү. *.. беҙ сиктәребеҙҙе демаркациялауға һәм күп кенә бәхәсле мәсьәләне дуҫтарса хәл итеүгә өлгәшкәйнек.* «Совет Башҡортостаны», 1976, 6 ғинуар.

**ДЕМА́РШ** [*рус.* ⟨ *фр.*] *и.* Берәй дәүләттең хөкүмәтенә ҡарата булған дипломатик сығыш. *Илсе демаршы.*

**ДЕМИЛИТАРИЗА́ЦИЯ** [*рус.*] *и.* Берәй дәүләткә хәрби промышленность һәм хәрби көс тотоуҙың тыйылыуы; ҡоралһыҙландырыу. *Демилитаризация үткәреү.*

**ДЕМИЛИТАРИЗАЦИЯЛАНЫУ** *к. төш. ҡар.* **демилитаризациялау.** *Демилитаризацияланған зона.*

**ДЕМИЛИТАРИЗАЦИЯЛАУ** *к.* Демилитаризация яһау.

**ДЕМИСЕЗОН** [*рус.* демисезонный ⟨ *фр.*] *с. һөйл.* Яҙлы-көҙлө кейеүгә тәғәйенләнгән. *Демисезон пальто.*

**ДЕМОБИЛИЗА́ЦИЯ** [*рус.* ⟨ *фр.*] *и.* **1.** Хәрби көстәрҙең һәм халыҡ хужалығының хәрби хәлдән тыныс хеҙмәткә күсерелеүе. *Демобилизация башланыу. Демобилизация планы.*

**2.** Һуғыш йәки хеҙмәт срогы бөткәндән һуң ғәскәри кешенең хәрби хеҙмәттән бушатылыуы.

**ДЕМОБИЛИЗАЦИЯЛАНЫУ** *к. төш. ҡар.* **демобилизациялау.** *Демобилизацияланған армия. Көҙөн демобилизацияланып ҡайтҡан һалдат.*

**ДЕМОБИЛИЗАЦИЯЛАУ** *к.* Демобилизация яһау. *Ғәскәрҙе демобилизациялау. Промышленносты демобилизациялау. Һалдаттарҙы демобилизациялау.*

**ДЕМО́ГРАФ** [*рус.*] *и.* Демография буйынса белгес.

**ДЕМОГРАФИК** *с.* Демографияға мөнәсәбәтле. *Демографик иҫәп.*

**ДЕМОГРА́ФИЯ** [*рус.* ⟨ *гр.*] *и.* Халыҡты, уның үҫеш-үҙгәреш закондарын ижтимағи-тарихи шарттарға бәйле өйрәнә торған фән. *Демография — ул халыҡтың һанын, енесен, йәшен, шөғөлөн, үлеү-тыуыуын, өйләнеү-айырылышыуын, йөрөү-күсеүен һәм башҡа яҡтарын тикшерә торған иң ҡыҙыҡлы фәндәрҙең береһе.* «Совет Башҡортостаны», 1985, 13 ғинуар.

**ДЕМОКРА́Т** [*рус.*] *и.* **1.** Демократия яҡлы кеше. *Рус революцион демократтары.*

**2.** Демократик партия ағзаһы.

**3.** *иҫк.* Халыҡ араһынан сыҡҡан, хеҙмәтсән халыҡ кеүек көн күргән кеше.

**ДЕМОКРАТИ́ЗМ** [*рус.*] *и.* Идара итеүҙең демократик формаһы, ниҙеңдер демократик ҡоролошо, демократик иректәрҙең барлығы.

**ДЕМОКРАТИК** *с.* Демократия нигеҙендә ҡоролған, демократияны тормошҡа ашырған. *Демократик республика. Демократик ҡоролош.*

**ДЕМОКРА́ТИЯ** [*рус.* ⟨ *гр.*] *и.* **1.** Йәмғиәттең власть башында халыҡ тороуына, халыҡтың дәүләт эштәрен хәл итеүҙә ҡатнашыуына һәм уның хәл итеүҙә киң хоҡуҡтары, ирке булыуына нигеҙләнгән политик ҡоролош формаһы. *Партиялағы демократия. Халыҡ демократияһы. Социалистик демократия.* ■ *Демократия — ул дәүләт формаһы, дәүләт төрҙәренең береһе. Тимәк, ул да, һәр төрлө дәүләт кеүек, кешеләргә ҡарата ойошҡан, системалы көсләү ҡулланыу булып тора.* В. И. Ленин, Һ. әҫ., 2 т., 1962.

**2.** Бөтә коллектив ҡатнашлығы менән тормошҡа ашырыла торған етәкселек формаһы.

♦ **Буржуаз демократия** буржуазияның хеҙмәтсәндәр өҫтөнән хакимлығы формаль яҡтан бөтә граждандарҙың политик хоҡуҡтары һәм иректәре тигеҙлеге менән йәшергән дәүләт ойошмаһы формаһы.

**ДЕМОКРАТИЯЛАШТЫРЫУ** *к.* Демократик нигеҙҙә үҙгәртеп ҡороу. *Дәүләтте демократиялаштырыу. Идараны демократиялаштырыу. Һайлау системаһын демократиялаштырыу.*

**ДЕМОКРАТИЯЛАШЫУ** *к.* Демократик нигеҙгә ҡоролоу.

**ДЕМОКРАТЛАШЫУ** *к. һөйл.* Демократ (1 мәғ.) булыу, демократҡа әйләнеү. *.. Туғанов ҡыҙып китте: — Халыҡ, халыҡ имеш! Харап демократлашып киттегеҙ әле.* Ә. Вәли.

**ДЕМОКРАТСЫЛЫҠ** *и. ҡар.* **демократизм.**

**ДЕМОНСТРА́НТ** [*рус.*] *и.* Демонстрацияла (1 мәғ.) ҡатнашҡан кеше. *Демонстранттар төркөмө. Демонстранттар байраҡ күтәреп, ҡала урамына сыҡты.*

**ДЕМОНСТРАТИВ** [*рус.* демонстративный] *с.* **1.** Төрлө нәмәләр күрһәтеп башҡарыуға ҡоролған; күргәҙмәле. *Демонстратив лекция. Демонстратив ысул.*

**2.** *һөйл.* Килешмәгән, риза булмаған һ. б. һымаҡ кире тойғоно махсус рәүештә асыҡтан-асыҡ күрһәткән, белдергән. *Демонстратив сығыш. Демонстратив рәүештә баш тартыу. Демонстратив рәүештә сығыш яһау. Демонстратив рәүештә сығып китеү.*

**ДЕМОНСТРА́ЦИЯ** [*рус.* 〈 *лат.*] *и.* **1.** Ижтимағи-политик теләкте, ихтыярҙы белдерә торған күмәк сығыш (күмәкләп урамдарҙа йөрөү һ. б.). *Беренсе май демонстрацияһы. Демонстрация ағымы. Демонстрацияға сығыу. Демонстрация яһау. Демонстрацияла ҡатнашыу.*

**2.** Ниндәйҙер тойғо, теләкте асыҡтан-асыҡ белдергән күренеш. *Советтар халҡының берҙәмлек һәм ойошҡанлыҡ демонстрацияһы. Демонстрацияға әйләнеү.*

**ДЕМОНСТРАЦИЯЛАНЫУ** *ҡ. төш. ҡар.* **демонстрациялау.** *Моделдәр йортонда демонстрацияланған коллекцияларҙың күбеһе универсаль. Уларҙы беҙ күҙ ҙә, яҙ ҙа кейеп йөрөй алабыҙ.* «Совет Башҡортостаны», 1985, 28 декабрь.

**ДЕМОНСТРАЦИЯЛАУ** *ҡ.* Күрһәтеү, күргәҙмәләү.

**ДЕМОНТА́Ж** [*рус.* 〈 *фр.*] *и. тех.* Ҡорамал, йыһаздарҙы һүтеү, тағатыу эше. *Буровойҙа демонтаж эше башланды. Шәмдәргә ялғанған торбаларҙы ситкә сығарып, штабелгә өйҙөләр.* Ғ. Ибраһимов.

**ДЕМОНТАЖЛАНЫУ** *ҡ. төш. ҡар.* **демонтажлау.**

**ДЕМОНТАЖЛАУ** *ҡ. тех.* Ҡорамал,йыһаздарҙы һүтеү, тағатыу. *Электр станцияһын демонтажлау.*

**ДЕМОРАЛИЗА́ЦИЯ** [*рус.* 〈 *фр.*] *и.* **1.** Әхләктең түбән төшөүе, мораль тарҡалыш.

**2.** Тәртиптең, мораль рухтың тарҡалышы, эшхәрәкәткә булған һәләттең юғалыуы. *Дошман ғәскәрҙәренең деморализацияһы.*

**ДЕМОРАЛИЗАЦИЯЛАНЫУ** *ҡ. төш. ҡар.* **деморализациялау.**

**ДЕМОРАЛИЗАЦИЯЛАУ** *ҡ.* Деморализацияға дусар итеү. *Дошман ғәскәрҙәрен деморализациялау.*

**ДЕ́МПИНГ** [*рус.* 〈 *ингл.*] *и. эк.* Конкуренттарҙы ҡыҫырыҡлап сығарыу маҡсатында сит илдәргә сығарылған тауарҙың үҙ хаҡынан түбәнгә һатылыуы.

**ДЕНАТУРА́Т** [*рус.* 〈 *фр.*] *и.* Составына ағыулы йәки тәмһеҙ матдәләр ҡушылған, тәме һәм еҫе насар булған этил спирты.

**ДЕНАТУРЛАУ** *ҡ. хим.* Техник маҡсатта ҡулланыу өсөн берәй матдәнең тәьҫире менән аҡһымдың үҙсәнлектәрен үҙгәртеү. *Спиртты денатурлау.*

**ДЕНДРА́РИЙ** [*рус.* 〈 *гр.*] *и.* Фәнни тәжрибәләр, культура-ағартыу һ. б. эштәр алып барыу өсөн төрлө ағас һәм ҡыуаҡ ултыртылған баҡса.

**ДЕНДРОЛОГИК** *с.* Дендрологияға ҡағылышлы, дендрологияға бәйле. *Дендрологик баҡса.*

**ДЕНДРОЛО́ГИЯ** [*рус.* 〈 *гр.*] *и.* Ботаниканың ағастарҙы һәм ҡыуаҡ төрҙәрен өйрәнә торған бүлеге.

**ДЕНОНСА́ЦИЯ** [*рус.* 〈 *фр.*] *и. дип.* Ниндәйҙер бер дәүләттең халыҡ-ара берәй договорҙы өҙөү тураһындағы белдереүе.

**ДЕНТИ́Н** [*рус.* 〈 *лат.*] *и.* Тештең төп өлөшөн тәшкил иткән һөйәк туҡымаһы. *Тештең ҡаты нигеҙ өлөшө дентиндән тора. Дентин цементтан ҡаты.*

**ДЕНЩИ́К** [*рус.*] *и.* Батша армияһында офицерға хеҙмәтсе булып торған һалдат. *Денщик булыу.* ■ *Васильев күберәк ваҡыт ас. Уның ике денщигы аҙыҡ килтергәндә юлда яраланған, өсөнсө денщигы ҡарт.* Д. Юлтый.

**ДЕҢ** [1] *оҡш.* Тимер-томор бер-береһенә һуғылғанда яңғырап сыҡҡан нәҙек тауышты белдергән һүҙ. *Дең итеү. Дең итеп ҡалыу.*

**ДЕҢ** [2] *р. диал.* Төп-төҙ, ныҡ. *Дең баҫыу. Дең йөрөү. Дең тороу. Кәүҙәне дең тотоу.* ■ .. *Аҡъял менән Тау батырың да .. дең баҫып, ары торған булған, ти* (Әкиәттән).

♦ **Дең бер үҙе** япа-яңғыҙ. *Дең бер үҙең ҡалыу. Дең бер үҙең йәшәү.*

**ДЕҢГЕЛ** *оҡш. ҡар.* **дең** [1].

**ДЕҢГЕЛ-ДЕҢГЕЛ** *оҡш.* Ҡабат-ҡабат деңгел иткән тауышты белдергән һүҙ. *Деңгел-деңгел килеү.* ■ *Ә дуғала көмөш ҡыңғырауҙар деңгел-деңгел итеп яңғырай.* Б. Бикбай.

**ДЕҢГЕЛДӘТЕҮ** *ҡ.* Дең-дең иттереү, деңгел-деңгел иттереү.

**ДЕҢГЕЛДӘҮ** *ҡ.* Дең-дең итеү, деңгел-деңгел итеү.

**ДЕҢ-ДЕҢ** *оҡш.* Ҡабат-ҡабат дең [1] иткән тауышты белдергән һүҙ. *Дең-дең итеү.* ■ *Дең-дең килә ҡыңғырауҙар йәки тайҙар бышҡыра.* К. Ильясов.

**ДЕҢРӘЙЕҮ** *ҡ. һөйл.* Бөгөлә алмай төп-төҙ ҡатыу. *Деңрәйеп ултырыу.*

**ДЕПАРТА́МЕНТ** [*рус.* 〈 *фр.*] *и.* **1.** Революцияға тиклемге Рәсәйлә һәм ҡайһы бер буржуаз илдәрҙә министерство, юғары хөкүмәт йәки суд бүлеге. *Полиция департаменты.* ■ *Суд бөтөүгә генерал Кашин департаментҡа килеп төштө.* М. Сөндөклө.

**2.** АҠШ-та һәм Швейцарияла министрлыҡ. **Дәүләт департаменты** АҠШ-тың сит ил эштәре министерствоһы.

**ДЕПЕ́ША** [*рус.* 〈 *фр.*] *и.* **1.** Ашығыс тапшырылған дипломатик, хәрби йәки рәсми хәбәр. *[Гордей:] Мин полиция департаментының шифр менән яҙылған депешаһын уҡыным. Депешала .. Курепин тигән большевикты тоторға ҡушылған.* Х. Мохтар.

**2.** *иҫк.* Телеграмма.

**ДЕПО́** [*рус.* 〈 *фр.*] *и.* Локомотив, вагон һ. б. тимер юл сараларын ҡуйыу, көндәлек ремонт үткәреү өсөн ҡулайлаштырылған бина. *Трамвай депоһы. Паровоз депоһы.* ■ *1892 йылдың 27 декабрендә Өфөлә ярым кустар паровоз депоһы һалынған.* «Совет Башҡортостаны», 1968, 9 ғинуар. / Янғын һүндереү машиналары ҡуйыла торған урын. *Пожар депоһы.* ■ *Элегерәк Кинйәкәй ауыл советы каланчалы пожар депоһы эшләткән.* «Совет Башҡортостаны» 1975, 2 июнь.

**ДЕПРЕССИВ** [*рус.* депрессивный] *с.* Депрессияға хас, депрессия хәлендәге. *Экономикалағы депрессив күренештәр.*

**ДЕПРЕ́ССИЯ** [*рус.* 〈 *лат.*] *и.* **1.** Капиталистик илдәрҙә хужалыҡтағы төшөнкөлөк, тор-

тонлоҡ. *Экономик депрессия. Депрессия фаҙаһы.*

**2.** Күңел һүренкелеге; бошонҡолоҡ, рухи төшөнкөлөк. *Ҡартлыҡ психозы осоронда йыш ҡына һаташыу һәм эс бошоу — депрессия күҙәтелә. Был мейе күҙәнәктәренең патологик үҙгәреүенән, юҡҡа сығыуынан, мейенең кесерәйеүенән килә.* М. Ғатуллин.

**ДЕПУТА́Т** [*рус.* ⟨ *лат.*] *и.* Хөкүмәт ойошмаларына һайланған вәкил. *СССР Верховный Советы депутаты. Ауыл Советы депутаты. Халыҡ депутаттары советы. Депутат итеп һайлау.* ■ *Партия киләсәк тә лә депутаттар итеп дәүләт эштәрен юғары кимәлдә алып барырға һәләтле иң лайыҡлы кешеләрҙең һайланыуы, Советтарҙың составының даими яңырыуы тураһында хәстәрлек күрәсәк.* «Совет Башҡортостаны», 1986, 26 февраль.

**ДЕПУТАТЛЫҠ** *и.* Депутат вәкәләте һәм вазифаһы. *Депутатлыҡ бурысы. Депутатлыҡ мандаты. Депутатлыҡҡа кандидат.*

**ДЕПУТА́ЦИЯ** [*рус.* ⟨ *фр.*] *и.* Берәй эште хәл итеү өсөн йәмғиәттән йәки берәй ойошманан һайланған вәкилдәр төркөмө; вәкәләт. *Депутация ебәреү. Депутацияны ҡабул итеү.*

**ДЕР** *окш.* Ваҡ ҡына итеп ҡалтыраған хәрәкәтте һәм шул хәрәкәттең тауышын белдергән һүҙ. *Һуғыш!.. Һуғыш!.. Ер дер килә!* Р. Ниғмәти.

◆ **Дер ҡалтырау** *кар.* **ҡалтырау** 2. **Дер һелкетеү** *кар.* **һелкетеү.**

**ДЕР-ДЕР** *окш.* Ҡабат-ҡабат дер иткән тауышты белдергән һүҙ. *Дер-дер итеү. Дер-дер килеү.*

**ДЕРЕЛДӘТЕҮ** *к.* **1.** Дер-дер килтереү, дер-дер иттереү. *Поездар [ауылдың] ҡаралтыларын дерелдәтә, иҫке стеналарҙың тупраҡтарын ишә.* Д. Юлтый. / *күсм.* Ҡурҡытыу. *Йөрәкте дерелдәтә.*

**2.** *күсм.* Ныҡ, көслө һелкетеү. *Дерелдәтеп алып китеү.* ■ *Бабсаҡтың менеп алған ҡара кире [аты] килә ятыр дерелдәтеп ҡара ерҙе.* «Бабсаҡ менән Күсәк».

**ДЕРЕЛДӘҮ** *к.* **1.** Дер-дер һелкенеү, дер-дер ҡалтыраныу. *Аяҡ быуындары дерелдәй. Ирене дерелдәй. Ҡулы дерелдәй. Тәне дерелдәй.* ■ *Тәнем ут шикелле яна, тешем-тешкә теймәй дерелдәйем.* М. Тажи.

**2.** *күсм.* Ҡурҡып ҡалтыраныу. *Борон нәсәлниктәр килер ине, дерелдәп торор инек.* Н. Ҡәрип. *Был юлдан үткән ваҡытта йөрәк дерелдәй ине.* С. Кулибай.

**ДЕРЖА́ВА** [*рус.*] *и.* Үҙаллы политикаһы булған, ҡеүәте ҙур дәүләт. *Бөйөк держава.* ■ *Беренсе биш йыллыҡтар дәүерендә беҙҙең илебеҙҙең йөҙө кайтанан үҙгәрҙе, совет иле көслө, индустриаль державаға әйләнде.* К. Мәргән.

**ДЕРМАТИ́Н** [*рус.* ⟨ *гр.*] *и.* Нитроцеллюлоза менән ҡапланған яһалма күн. *Ҡара дерматин. Дерматин менән көпләнгән ишек. Дерматин тышлы дәфтәр.* ■ *Хәрби кейемдәге егет ҡара дерматин менән көпләнгән ишек артына инеп юғалды.* В. Исхаков.

**ДЕРМАТИ́Т** [*рус.* ⟨ *гр.*] *и. мед.* Тире шешеү ауырыуы.

**ДЕРМАТО́ЛОГ** [*рус.*] *и.* Тире ауырыуҙары белгесе, врачы.

**ДЕРМАТОЛО́ГИЯ** [*рус.* ⟨ *гр.*] *и.* Медицинаның тире ауырыуҙарын, уларҙы булдырмау сараларын һәм дауалауҙы өйрәнә торған бүлеге.

**ДЕРРӘ** *ҡыу.* Һарыҡты ҡыуғанда әйтелә; беррә. *[Ҡатын:] Ҡыуалағыҙ шул һарыҡтарҙы, ебәрмәгеҙ! Деррә!* Ж. Кейекбаев.

**ДЕРТ** *окш. кар.* **терт.**

**ДЕСА́НТ** [*рус.* ⟨ *фр.*] *и.* Хәрби задание үтәү, һуғыш һ. б. өсөн карантан йәки самолёттан дошман еренә махсус әҙерләп төшөрөлгән ғәскәр. *Диңгеҙ десанты. Һауа десанты. Десант ғәскәре. Десант ташлау. Десант төшөрөү.* ■ *Әгәр ҙә .. дошман самолёттан десант ташлаһа, һыбайлылар уларҙы юҡ итергә тейеш ине.* Ә. Ихсан. *Һауа десанты ҡамап алынды. Киң ялан дошман һалдаттары менән тулды.* Ғ. Әмири.

**ДЕСА́НТНИК** [*рус.*] *и. кар.* **десантсы.**

**ДЕСАНТСЫ** *и.* Десант ғәскәрендәге һалдат; десантник. / Десантта ҡатнашыусы. *Десантсылар төркөмө.* ■ *Ракеталар менән яҡтыртылған һыу өҫтөндә десантсылар тейәлгән балыҡсы күренде.* Ғ. Әхмәтшин.

**ДЕСЕ́РТ** [*рус.* ⟨ *фр.*] *и. һөйл.* Аш аҙағында бирелә торған тәмле-татлы ашамлыҡ. *Десертҡа еләк килтерҙеләр.*

**ДЕ́СПОТ** [*рус.* ⟨ *гр.*] *и.* **1.** Боронғо Көнсығыш ҡол биләүселек монархияһында сикләнмәгән власть менән үҙ белдегенсә эш иткән юғары хаким.

**2.** *күсм.* Башҡаларҙың иркен, теләген тыйып, иҙеп йәшәгән кеше; залим. *Деспот булыу.*

**ДЕСПОТИ́ЗМ** [*рус.*] *и.* Үҙ хөкөмө менән идара итеүгә ҡоролған сикләнмәгән хакимлыҡ. *Бөйөк Октябрь деспотизм принциптарын ғына түгел, деспотизмдың үҙен тамырынан йолҡоп ташланы.* Б. Бикбай.

**ДЕСПОТИК** *с.* Деспотизмға хас; яһил, аяуһыҙ. *Деспотик әҙәм. Деспотик рәүештә идара итеү.*

**ДЕСПОТЛЫҠ** *и.* Деспот (2 мәғ.) булған хәл, деспот сифаты; залимлыҡ. *Хакимдең деспотлығы.*

**ДЕСЯТИ́НА** [*рус.*] *и. кар.* **дисәтинә.**

**ДЕСЯ́ТНИК** [*рус.*] *и. кар.* **дисәтник.**

**ДЕТАЛЛӘШТЕРЕЛЕҮ** *к. төш. кар.* **деталләштереү.** *Хикәйәлә ҡайһы бер ваҡиғалар артыҡ деталләштерелеп бирелгән.*

**ДЕТАЛЛӘШТЕРЕҮ** *к. һөйл.* Айырым деталдәренә тиклем төпсөү; ентекләү, берәмекләү, ваҡлау.

**ДЕТА́ЛЬ** [*рус.* ⟨ *фр.*] *и.* **1.** Машинаның, механизмдың айырым иң ваҡ өлөшө.

**2.** *кит.* Айырым бер өлөш, айырым бер яҡ. *«Йәнтүрә хикәйәһе» 1812 йылдағы һуғыштың айырым деталдәрен тасуирлай.* Ә. Усманов.

**ДЕТДО́М** [*рус.*] *и. һөйл.* Балалар йорто. *Детдомға биреү. Детдомда тәрбиәләнеү.* ■ *Туған детдом! Күпме бурыслы мин һиндә алған аҡыл, белемгә.* Р. Ғарипов.

**ДЕТЕКТИВ**[1] [*рус.* ⟨ *ингл*] *и.* **1.** Йәшерен полиция агенты; шымсы.

**2.** Шымсы мажараларын һүрәтләгән хикәйә, роман йәки кинофильм.

**ДЕТЕКТИВ**[2] [*рус.* детективный] *с.* Шымсы мажараларын, төрлө серле енәйәт асыуҙы

һүрәтләгән (әҫәргә ҡарата). *Детектив фильм. Детектив әҙәбиәт.* ■ *Әҫәрҙе мажаралыраҡ ваҡиғалар менән тултырырға, сюжетты көсөргәнешлерәк ҡорорға тырышыу тенденцияһы билдәле күләмдә детектив элементты килтереп индерә.* К. Мәргән.

**ДЕТЕ́КТОР** [*рус.* ⟨ *лат.*] *и. радио* Тауыштың юғары тирбәлеү йышлығын ҡолаҡ ишетерлек итеп түбәнәйтә торған махсус ҡорамал. *Приемниктың детекторы.*

**ДЕТЕКТОРЛЫ** *с.* Детекторы булған, детектор ярҙамында эшләгән. *Детекторлы радиоалғыс.*

**ДЕТЕРМИНИ́ЗМ** [*рус.* ⟨ *лат.*] *и. филос.* Бөтә материаль һәм рухи донъя күренештәре бер-береһенә сәбәпсе һәм бер-береһе менән билдәле законлылыҡ буйынса бәйле, тип аңлатҡан материалистик тәғлимәт.

**ДЕТЕРМИНИСТИК** *с.* Детерминизмға нигеҙле. *Детерминистик ҡараш.*

**ДЕТОНА́ТОР** [*рус.*] *и.* **1.** Үҙенең шартлауы менән икенсе шартлатҡыс матдәне шартлата торған матдә.

**2.** Шартлатҡысты тоҡандыра торған капсюль; тоҡандырғыс. *[Әбделхаҡ:] Бөгөн складтан кемдер шартлатҡыс детонаторҙарҙы алған.* Ш. Янбаев.

**ДЕТОНА́ЦИЯ** [*рус.* ⟨ *лат.*] *и. махс.* Бер шартлағыс матдәнең икенсе матдә ныҡ һелкенеүенән йәки шартлауынан шаңғып, ҡапыл тоҡанып китеүе. *Детонациянан шартлау.*

**ДЕТСА́Д** [*рус.*] *и. һөйл.* Балалар баҡсаһы (*ҡар.* **баҡса**). *Детсадта эшләү.* ■ *Аллеяла кешеләр үтә, детсад балалары йөрөйҙәр.* Ғ. Сәләм.

**ДЕҮЕЛДӘТЕҮ** *к. ҡар.* **геүләтеү**. *Деүелдәтеп донъя көтөү.* ■ *.. Был матур көндәрҙе деүелдәтеп үткәреүҙең үҙе рәхәт бит әле!* Ғ. Дәүләтшин.

**ДЕҮЕЛДӘҮ** *к. ҡар.* **геүелдәү.**

**ДЕҮЛӘТЕҮ** *к. ҡар.* **геүләтеү**. *Халыҡ деүләтеп ҡул сапты.* С. Агиш

**ДЕҮӘ** *и. диал.* Дөйә. *Туғай тулы деүәләрем һиңә булһын, Ҡолтап ағай* (Әкиәттән).

**ДЕФЕ́КТ** [*рус.* ⟨ *лат.*] *и.* Кәмселек, етешһеҙлек. *Эштәге дефект. Продукцияны дефектһыҙ етештереү.*

**ДЕФЕКТЛЫ** *с.* Кәмселекле, етешһеҙлекле, дефекты бар. *Дефектлы деталь. Дефектлы нәмә.*

**ДЕФИ́С** [*рус.* ⟨ *лат*] *и.* Ике һүҙ араһындағы ҡыҫҡа һыҙыҡ; һыҙыҡса (*мәҫ.* төнъяҡ-көнсығыш). *Дефис менән яҙыу.*

**ДЕФИЦИ́Т** [*рус.* ⟨ *лат.*] *и.* **1.** Сығымдың килемдән артыуы. *Баланс дефициты. Бюджет дефициты. Дефицитты кәметеү.*

**2.** Ниҙеңдер етешмәүе. *Ягыулыҡ дефициты.*

**3.** *с. мәғ.* Етерлек һанда булмаған, етешмәгән. *Дефицит ягыулыҡ. Дефицит тауар.*

**ДЕФОРМА́ЦИЯ** [*рус.* ⟨ *лат.*] *и. кит.* Ҡаты нәмәләрҙең тышҡы көстәр һ. б. тәьҫирендә формаһы йәки күләме үҙгәреүе. *Деформацияға килтереү. Деформация булдырмау.*

**ДЕФОРМАЦИЯЛАНЫУ** *к. кит. төш. ҡар.* **деформациялау.**

**ДЕФОРМАЦИЯЛАУ** *к. кит.* Тышҡы тәьҫир менән берәй есемдең йәки уның өлөштәренең күләмен, формаһын үҙгәртеү, боҙоу.

**ДЕЦИБЕ́Л** [*рус.*] *и.* Тауыш көсөн үлсәү берәмеге. *Белгестәрҙең әйтеүенә ҡарағанда, 85 децибеллы тауыш кеше һаулығына зарар килтермәй.* М. Хисмәтов.

**ДЕЦИМЕ́ТР** [*рус.*] *и.* Метрҙың ундан бер өлөшөнә тиң булған үлсәү берәмеге; ун сантиметр.

**ДЖАЗ** [*рус.* ⟨ *ингл.*] *и.* **1.** Күңел асыу өсөн тәғәйенләнгән еңел, күберәк бейеү музыкаһы. *Асыҡ тәҙрә төбөндә радиола ҡуйылған. Дауыт урелгән креслоға ултырып, джаз тыңлай.* Ш. Янбаев.

**2.** Күбеһе тынлы һәм һуғып уйнау ҡоралдарынан торған ҡатнаш оркестр.

**ДЖЕМ** [*рус.* ⟨ *ингл.*] *и.* Емеш-еләктән шәкәр менән ҡайнатып яһалған ҡуйы варенье. *Алма джемы.*

**ДЖЕ́МПЕР** [*рус.* ⟨ *ингл.*] *и.* Баштан кейелә торған элмәкһеҙ, яғаһыҙ бәйләнгән кофта. *Ирҙәр джемперы. Ҡатын-ҡыҙҙар джемперы. Джемпер бәйләү.*

**ДЖЕНТЛЬМЕ́Н** [*рус.* ⟨ *ингл.*] *и.* **1.** Англиялағы буржуаз-аристократик йәмғиәттең юғары ҡатламына ҡараған һәм уның әхләк-тәртип ҡағиҙәләрен ныҡ тотҡан кеше.

**2.** Тербиәле, нескә мөғәмәләле, ыҫпай кейемле кешегә ҡарата әйтелә. *Рөстәм ҡатын-ҡыҙ менән джентльмендәрсә әҙәпле мөғәмәлә итә белә.* Ф. Иҫәнғолов.

**ДЖЕРСИ́** [*рус.* ⟨ *ингл.*] *и.* Йөн йәки ебәктән бәйләнгән туҡыма һәм шул туҡыманан тегелгән кейем. *Аҡ джерси. Джерси пальто.*

**ДЖИ́У-ДЖИ́ТСУ** [*рус.*] *и. спорт* Ҡоралһыҙ һөжүм итеү һәм һаҡланау алымдарынан торған япон милли көрәше.

**ДЖО́УЛЬ** [*рус.* ⟨ *ингл.*] *и. физ.* Йылылыҡ миҡдарын, эшен, энергияны үлсәү берәмеге.

**ДЖУНГАР** *и. ҡар.* **жуңғар.**

**ДЖУ́НГЛИ** [*рус.* ⟨ *ингл.*] *и.* Кеше үтә алмаҫлыҡ һаҙлыҡлы тропик шыр урман. *Кеше үткеһеҙ джунглиҙы йырып сыҡҡан ике совет балаһы тураһында һинд дуҫтарым миңә шаҡ ҡатырлыҡ хәбәр һөйләне.* Ә. Бикчәнтәев.

**ДЗОТ** [*рус.*] *и.* Дошман утынан ышыҡланып атыу өсөн бүрәнә менән тупраҡтан өйөп эшләнгән һаҡланыу, оборона ҡоролмаһы. *Дошман дзотының амбразураһын .. кәүҙәһе менән ҡаплаған яҡташыбыҙ Александр Матросовтың батырлығы ике йөҙ тапҡыр .. ҡабатланды.* М. Хисаметдинов. *Чернушки ауылына инеү юлдарын дошмандың өс дзоты ҡаплап тора ине. Ҡарлы түбәгә оҡшаған был дзоттарҙан әленән-әле ут һибелә.* Х. Ғиләжев.

**ДЗЮДО́** [*рус.*] *и. спорт* Ҡоралһыҙ һөжүм итеү һәм һаҡланыу алымдарынан торған ирекле стилдәге япон милли көрәше (джиу-джитсу көрәше алымдары нигеҙендә барлыҡҡа килгән). *Дзюдо көрәше буйынса ярыш үткәреү.*

**ДИАБА́З** [*рус.*] *и.* Төҙөлөштә ҡулланыла торған ҡара төҫтәге ҡаты тау тоҡомо төрө.

**ДИАБЕ́Т** [*рус.* ⟨ *гр.*] *и. мед.* Саманап артыҡ һыуһау һәм күп бәүел бүленеү менән билдәлән-

гән ауырыу. *Медицина фәне иҫбат итеүенсә, атеросклероз, диабет, подагра .. шулай уҡ зәңге, рахит һәм башҡа күп ауырыуҙар ашау гигиенаһын боҙоуҙан килә.* В. Ғүмәров.

♦ **Шәкәр диабеты** тәнгә үҙләшмәүе арҡаһында бәүелдә һәм ҡанда шәкәр күбәйеү менән билдәләнгән ауырыу; шәкәр ауырыуы.

**ДИА́ГНОЗ** [*рус.* ⟨ *гр.*] *и.* Ауырыуҙың төрө, асылы, хәле тураһындағы врач билдәләмәһе. *Ауырыуҙың диагнозын билдәләү.* ■ .. *Врачтар гына бисәкәйгә дөрөҫ диагноз ҡуя алмай йөҙәне. Береһе йөрәк, икенсеһе нервы тине.* И. Ғиззәтуллин.

**ДИАГНОСТИК** *с.* Диагнозға һәм диагностикаға бәйле, мөнәсәбәтле. *Диагностик сара. Диагностик тикшеренеү.*

**ДИАГНО́СТИКА** [*рус.*] *и.* Медицинаның ауырыу билдәләрен, диагноз ҡуйыу юлдарын өйрәнгән бүлеге. *Диагностикала рентген нурҙарын ҡулланыу формалары йылдан-йыл киңәйә һәм камиллаша.*

**ДИАГОНА́ЛЬ** [1] [*рус.* ⟨ *лат.*] *и.* **1.** Күп мөйөштөң йәки күп ҡырҙың йәнәш булмаған мөйөштәренең түбәләрен тоташтырған тура һыҙыҡ. *Диагональ үткәреү.*

**2.** Ҡыя һырлы беше туҡыма. *Күк диагональ. Диагоналдән салбар тегеү.*

**ДИАГОНАЛЬ** [2] [*рус.* диагональный] *с.* Ҡырын, ҡыя. *Диагональ һыҙыҡ. Ерҙе диагональ йүнәлештә тырматыу.*

**ДИАГРА́ММА** [*рус.* ⟨ *гр.*] *и.* Ниндәй ҙә булһа һандар дәүмәлен сағыштырып күрһәткән һыҙма. *Үҫеш диаграммаһы. Диаграмма менән күрһәтеү.*

**ДИАКРИТИК: диакритик билдә** *лингв.* әйтелеш төҫмөрөн белдереү өсөн хәрефтең өҫтөнә йәки аҫтына ҡуйыла торған билдә.

**ДИАЛЕ́КТ** [*рус.* ⟨ *гр.*] *и. лингв.* Дөйөм халыҡ теленән ниндәйҙер үҙенә башҡа һыҙаттары менән айырылып торған телдең ерле бер төрө; дөйөм халыҡ теленән айырмалы булған бер төркөм һөйләштәрҙе берләштерә. *Башҡорт телендә өс — көнсығыш, көньяҡ һәм төньяҡ-көнбайыш диалекттары бар.*

**ДИАЛЕКТАЛЬ** [*рус.* диалектальный] *с. лингв.* Диалектҡа хас. *Диалекталь һүҙҙәр. Диалекталь хата.*

**ДИАЛЕКТИ́ЗМ** *и.* Берәй диалект, һөйләштә генә ҡулланыла торған һүҙ йәки һүҙбәйләнеш (дөйөм әҙәби телгә ҡарата). *Лексик диалектизм. Фонетик диалектизм.*

**ДИАЛЕКТИК** *с. филос.* Диалектика (1 мәғ.) закондарына нигеҙләнгән. *Диалектик материализм. Диалектик метод.*

**ДИАЛЕ́КТИКА** [*рус.* ⟨ *гр.*] *и. филос.* **1.** Тәбиғәт, кешелек йәмғиәте һәм фекерләү үҫешенең дөйөм закондары тураһындағы философик тәғлимәт. *Материалистик диалектика. Диалектика закондары.*

**2.** *һөйл.* Ниҙеңдер хәрәкәт һәм үҫеш барышы, процесы. *Йәштәр үҫә, ҡарттарҙы алмаштыра — тормош диалектикаһы шул бит.* «Совет Башҡортостаны», 1969, 15 август.

**ДИАЛЕКТО́ЛОГ** [*рус.*] *и.* Диалектология белгесе.

**ДИАЛЕКТОЛОГИК** *с.* Диалекталь үҙенсәлектәргә мөнәсәбәтле, диалекталь үҙенсәлектәрҙе күрһәткән. *Диалектологик атлас. Диалектологик һүҙлек. Диалектологик экспедиция.* ■ *Диалектологик һүҙлектәрҙә бер телдең һөйләштәрендә генә ҡулланылған, әҙәби телгә лексик норма итеп алынмаған бөтә һүҙҙәр туплана.* Ж. Кейекбаев.

**ДИАЛЕКТОЛО́ГИЯ** [*рус.*] *и.* Тел ғилеменең диалекттарҙы, һөйләштәрҙе өйрәнә торған тармағы.

**ДИАЛО́Г** [*рус.* ⟨ *гр.*] *и.* Ике йәки бер нисә кешенең ҡара-ҡаршы һөйләшкән һүҙе. / Әҙәби әҫәрҙә ике кешенең ҡара-ҡаршы һөйләшеүен биргән өлөш. .. *Шиғырҙың егет-ҡыҙ диалогына ҡоролоуы һәм һәр юлдың «йәр, йәр» һүҙенә бөтөүе .. туй йырын хәтерләтә.* Ә. Харисов. / Әңгәмә формаһында яҙылған әҙәби әҫәр төрө.

**ДИАМА́Т** [*рус.*] *и. һөйл.* Диалектик материализм (юғары уҡыу йорттарында уҡытылған предмет тураһында).

**ДИА́МЕТР** [*рус.* ⟨ *гр.*] *и. мат.* Түңәрәктең үҙәге аша үтеп, түңәрәктәге ике нөктәне тоташтырған тура һыҙыҡ. *Оҙон диаметрлы түңәрәк. Ҡыҫҡа диаметрлы түңәрәк.* / Һәр түңәрәк есемдең арҡырыһы. *Имән олононоң диаметры ике метр.*

**ДИАМЕТРАЛЬ** [*рус.* диаметральный] *с.* **1.** Диаметр һыҙығы буйынса арҡыры ике өлөшкә бүлгән. *Диаметраль яҫылыҡ.*

**2.** *күсм.* Тулыһынса, тотош. *Диаметраль ҡаршылыҡ.*

**ДИАПАЗО́Н** [*рус.* ⟨ *гр.*] *и.* **1.** *муз.* Йырсы йәки музыка ҡоралы сығара ала торған иң юғары һәм иң түбән тауыштар аралығы менән үлсәнгән йыр йәки музыка башҡарыу мөмкинлеге. *Ҡурайҙың диапазоны өс октава самаһы.*

**2.** *күсм.* Берәй нәмәнең таралыу сиге; күләм, киңлек. *Белем диапазоны. Киң диапазонлы артист.*

**ДИАПОЗИТИ́В** [*рус.* ⟨ *гр.* + *лат.*] *и.* Махсус проекцион аппарат менән күрһәтеү өсөн быялаға йәки йылтыр пленкаға төшөргән аҡлы-ҡаралы йәки төҫлө фото һүрәт.

**ДИАСКО́П** [*рус.* ⟨ *гр.*] *и.* Үтә күренмәле рәсемдәрҙе (диапозитив диафильм), текст һ. б. ҙурайтып экранға һ. б. төшөрә торған оптик-механик аппарат.

**ДИАТЕ́З** [*рус.* ⟨ *гр.*] *и. мед.* Организмдың ҡайһы бер ауырыуҙарға тиҙ бирешеүсәнлеге.

**ДИАТЕ́РМИ́Я** [*рус.* ⟨ *гр.*] *и. мед.* Дауалау маҡсатында электр тогы менән тәнде йылытыу ысулы.

**ДИАТОНИК** *с. муз.* Бер баҫҡыс ладтан икенсе баҫҡысҡа, бер тауыштан икенсе тауышҡа эҙмә-эҙлекле күсә торған. *Диатоник гамма.*

**ДИАФИ́ЛЬМ** [*рус.*] *и.* Диапозитивтарҙан төҙөлгән фильм. *Диафильм күрһәтеү. Диафильм ҡарау.*

**ДИАФО́Н** [*рус.* ⟨ *гр.*] *и.* Томан ваҡытында диңгеҙ маяғынан сигнал бирә торған акустик ҡулайлама.

**ДИАФРА́ГМА** [*рус.* ⟨ *гр.*] *и.* **1.** *анат.* Күкрәк ҡыуышлығы менән ҡорһаҡ ҡыуышлығы араһындағы яры; күкрәк шаршауы.

**2.** *махс.* Оптик системаға үткән яҡтылыҡ нурының юлын киңәйтә йәки тарайта торған ҡулайлама. *Фотоаппарат диафрагмаһы.*

**ДИВА́Н** [1] [*рус.* ⟨*фарс.*] *и.* Һөйәнеп ултырыу һәм ятыу өсөн йомшаҡ итеп эшләнгән өй ҡаралды төрө. *Йомшаҡ диван. Диванда ултырыу.* ■ *Кабинетына инеү менән Ҡәҙретдинов ҡара күн менән көпләнгән диванға гөрһөлдәп барып ултырҙы.* Ф. Иҫәнғолов.

**ДИВАН** [2] *и. ҡар.* **диуан** [1].

**ДИВА́Н-КАРАУАТ** [*рус.* диван-кровать] *и.* Артын төшөрөп, карауат һымаҡ итеп ҡуйып була торған диван. *Ибрахан дарыу эсеп, диван-карауатка һуҙылып ятты.* А. Ғирфанов.

**ДИВАР** *и. ҡар.* **диуар.**

**ДИВЕРСА́НТ** [*рус.*] *и.* Диверсия менән шөғөлләнгән кеше. *Диверсант ебәреү.* ■ *Был төндә өс диверсанттың сик аша үтергә тейешлеге билдәле ине.* С. Кулибай.

**ДИВЕ́РСИЯ** [*рус.* ⟨ *лат.*] *и.* Берәр илдә сит ил агенттары тарафынан зыян килтереү максатында алып барылған төрлө мөһим объекттарҙы шартлатыу, ҡыйратыу, сафтан сығарыу шөғөлө. *Диверсия акты. Диверсия эштәре. Диверсия яһау.*

◆ **Идеологик диверсия** империалистик илдәрҙең радио, телевидение йәки матбуғат аша социалистик илдәргә ҡаршы провокацион сығышы.

**ДИВИДЕ́НД** [*рус.* ⟨ *лат.*] *и.* Капиталистик йәмғиәттә: ниндәйҙер бер предприятиеға һалынған пай иҫәбенән алына торған файҙа.

**ДИВИЗИО́Н** [*рус.* ⟨*фр.*] *и.* **1.** *хәрби* Артиллерия, ракета, кавалерия һәм бронетанк частарындағы ғәскәри подразделение. *Полковник Шайморатов төндәрен йокламай штабта ултыра, разведка дивизионының командиры килтергән материалдар менән таныша.* Ә. Ихсан.

**2.** *диңг.* Бер төрлө кластағы бер нисә хәрби караптарҙан торған берләшмә. *Миноностар дивизионы.*

**ДИВИ́ЗИЯ** [*рус.* ⟨ *фр.*] *и.* Бер нисә полк йәки бригаданан торған ҙур ғәскәри берләшмә, соединение. *Бронетанк дивизияһы. Дивизия командиры.* ■ *Чернигов калаһын азат итеү өсөн алып барган һуғыштарҙа батырлыҡ күрһәткәне өсөн Башҡорт гвардия кавалерия дивизияһына «Чернигов» исеме бирелде.* Ә. Ихсан.

**ДИДАКТИ́ЗМ** [*рус.*] *и.* Өгөт-нәсихәтселек. *Тәрбиә коро дидактизмға ҡайтып ҡалырға тейеш түгел.* К. Мәргән.

**ДИДА́КТИК** [*рус.*] *и.* Дидактика (1 мәғ.) менән шөғөлләнгән белгес. *Совет дидактиктарының тикшеренеүҙәре материалды яҡшыраҡ үҙләштереү өсөн уҡыусыларҙың активлығын һәм үҙаллығын күтәреү мөһим икәнен күрһәтә.* «Башҡортостан уҡытыусыһы», 1965, № 10.

**ДИДАКТИ́К** *с.* **1.** Дидактикаға (1 мәғ.) нигеҙләнгән, дидактикаға мөнәсәбәтле. *Дидактик принцип. Дидактик материал.*

**2.** Өгөт-нәсихәтле. *Дидактик шиғыр.* ■ *Мәҡәлдәр һәр ваҡыт ниндәйҙер дәрәжәлә дидактик максат күҙәткән һәм тормош тәжрибәһен дөйөмләштереү нигеҙендә барлыкка килгән.* Ж. Кейекбаев.

**ДИДА́КТИКА** [*рус.* ⟨ *гр.*] *и.* **1.** Уҡытыу эшенең йөкмәткеһе, формаһы һәм ысулы нигеҙләп бирелгән педагогика бүлеге.

**2.** Өгөт-нәсихәтселек.

**ДИДАР** [*фарс.*] *и. иҫк. кит.* Йөҙ, бит, сырай. *Эшселәр һөжүменән ҡыйратылды таш дивар, хөрриәт шунда уҡ барлыҡ донъяға күрһәтте дидар.* М. Ғафури. *Осраһам, күрһәм йөҙөңдө күңелемә дәрт калдыра, нисә көнгә саклы уның дидары нурландыра.* К. Ҡәрипов.

◆ **Дидар итеү** осраштырыу, тап итеү. **Дидар булыу** осрашыу, тап булыу; ҡауышыу. *Сәхабә барса әхъяри аныҡлә була дидар.* М. Өмөтбаев.

**ДИЕ́ТА** [*рус.* ⟨ *гр.*] *и.* Билдәле бер режимға ҡоролған туҡланыу төрө. *Диета һаклау. Диета буйынса туҡланыу.*

**ДИЕТЕ́ТИКА** [*рус.*] *и.* Ауырыуҙы дөрөҫ туҡландырыу тураһындағы фән.

**ДИЕТИК** *с.* Диетаға ярашлы, диетаға ҡоролған. *Диетик аҙыҡ. Диетик аш. Диетик ашхана.*

**ДИЗА́ЙН** [*рус.* ⟨*ингл.*] *и.* Промышленноста сығарылған нәмәләрҙең художестволы проектланыуы; художестволы, матурлыҡ яғынан конструкцияланыуы, биҙәлеүе.

**ДИЗА́ЙНЕР** [*рус.*] *и.* Промышленноста сығарылған нәмәләрҙе һәм промышленность объекттары, йәмәғәт ойошмалары, торлаҡ йорттары интерьерҙарын архитектура, художестволы яҡтан биҙәүсе художник-конструктор.

**ДИ́ЗЕЛЬ** [*рус.* ⟨ *нем.*] *и.* Шыйыҡ яғыулыҡ менән эшләгән эске яғыулыҡлы двигатель. *Дизель моторы. Дизель яғыулығы.*

**ДИЗЕНТЕРИ́Я** [*рус.* ⟨ *гр.*] *и. мед.* Йоғошло ҡаты эс китеү ауырыуы. *Дизентерия менән ауырыу. Дизентерия йоғоу.*

**ДИКОБРА́З** [*рус.*] *и. ҡар.* **йәйрә.**

**ДИКТА́НТ** [*рус.* ⟨ *лат.*] *и.* Дөрөҫ яҙырға өйрәтеү күнекмәһе өсөн әйтеп тороп яҙҙырыла торған яҙма эш. *Диктант дәфтәре. Диктанттар йыйынтығы. Диктант яҙыу. Диктантты тикшереү.*

**ДИКТА́Т** [*рус.* ⟨ *нем.*] *и.* **1.** Халыҡ-ара хоҡуғында: бер дәүләт тарафынан икенсе дәүләткә көсләп тағылған тиң хоҡуғы булмаған договорҙың атамаһы.

**2.** Көслө империалистик илдең көсһөҙ илгә үҙ талабын, үҙ шарттарын көсләп тағыу политикаһы.

**ДИКТА́ТОР** [*рус.* ⟨ *лат.*] *и.* **1.** Сикләнмәгән власть менән файҙаланып дәүләт менән идара итеүсе кеше; сикләнмәгән хөкөм эйәһе. / Ниндәйҙер өлкәлә ҙур шауҡымы булған кеше.

**2.** Боронғо Римда: сенат тарафынан тәғәйенләнгән вазифалы кеше.

**ДИКТАТУ́РА** [*рус.* ⟨ *лат.*] *и.* Өҫтөн синыфҡа таянған, бер ни менән сикләнмәгән дәүләт власы. *Хәрби диктатура.*

◆ **Пролетариат диктатураһы** киң ҡатлам хеҙмәтсәндәргә таянған, социалистик революцияла еңгән эшселәр синыфының дәүләт власы (капитализмдан социализмға күсеү осоронда).

**ДИ́КТОР** [*рус.* ⟨ *лат.*] *и.* Радио һәм телевидение тапшырыуҙарының тексын микрофон алдында уҡыусы. *Радио дикторы. Телевидение дикторы. Диктор булып эшләү.* ■ *Мәскәүҙән диктор фронт хәбәрҙәрен тапшыра.* М. Тажи.

**ДИ́КЦИЯ** [*рус.* 〈 *лат.*] *и.* Телмәрҙә һүҙҙәрҙең, ижектәрҙең асыҡ әйтелеш дәрәжәһе. *Асыҡ дикция. Дикцияһы яҡшы.*

**ДИҠҠӘТ** [*ғәр.*] *и.* Нимәгәлер ныҡ йүнәлтелгән күңел, уй; иғтибар. *Диҡҡәт биреү. Диҡҡәтте йәлеп итеү. Диҡҡәтте тартыу. Диҡҡәт менән тыңлау. Диҡҡәт менән уҡыу.* ■ *Мин уның йөҙөнә диҡҡәт менән ҡараһам да, таный алманым.* М. Ғафури. *Күрәһең, мин буйым-һыным менән диҡҡәтеңде тарта алманым — ҡарап ҡалдың, күңел һалманың.* М. Кәрим.

□ **Диҡҡәт итеү** күңелдә, уйҙы йүнәлтеү; иғтибар биреү. *Өй хужаһы Кәбирҙең ингәнен .. һиҙеп тә, диҡҡәт итмәне, әйләнеп ҡараманы.* Я. Вәлиев.

**ДИҠҠӘТЛЕ** *с.* Һәр нәмәгә күңел төбәп, иғтибар итеүсән; иғтибарлы. *Диҡҡәтле бала. Диҡҡәтле ҡараш. Диҡҡәтле булыу.*

**ДИҠҠӘТЛӘП** *р.* Күңел һалып, иғтибарлап, ҙур иғтибар менән. *Тотоп барыбыҙ бер юлды, диҡҡәтләп уңды һәм һулды. Йүнәләйек аҡ юл менән, тотошоп ҡулдарға ҡулды!* Д. Юлтый.

**ДИҠҠӘТҺЕҘ** *с.* Иғтибарһыҙ. *Диҡҡәтһеҙ бала. Диҡҡәтһеҙ булыу.*

**ДИЛ** [*фарс.*] *и. иҫк. кит.* Йөрәк.

**ДИЛАҒАЙ[ҒА]** *р. диал.* Зилалай(ға). *Дилағайға йөрөү.*

**ДИЛАРА** [*фарс.*] *с. иҫк. кит.* **1.** Һөйөклө, ҡәҙерле.

**2.** (баш хәреф менән) Ҡатын-ҡыҙ исеме.

**ДИЛБЕГӘ** *и.* Егелгән аттың башын тотоу, идара итеү өсөн йүгәнгә ике яҡлап беркетелгән оҙон бау. *Ҡайыш дилбегә. Ҡыл дилбегә. Дилбегә тотоу.* ■ *Шәмсиә ауыҙ эсенән матур ғына бер көй көйләп, дилбегәһен ҡаҡҡылап бара.* Ғ. Ғүмәр. *Аҡназаров .. ҡапыл дилбегәһен тартты һәм былай ҙа шәп юрта башлаған атын сыбырҡылаңы.* Ә. Вәли.

**ДИЛБЕГӘН** *и. диал.* Тилбәрән.

**ДИЛБОРЛОҠ** *и. диал.* Тилбәрән.

**ДИЛБӘР** [*фарс.*] *и. иҫк. кит.* **1.** Күңелдә биләүсе, һөйөклө кеше. *Элекке шиғырҙарҙа дилбәрҙәр үҙҙәренең ғишыҡ тойғоларын, күңел кисерештәрен асыҡтан-асыҡ әйтмәйҙәр.* Ә. Харисов.

**2.** (*баш хәреф менән*) Ҡатын-ҡыҙ исеме.

**ДИЛДАЛАЙ** *с.* Еңел аҡыллы, елғыуар. *[Иркәбикә — Әүхәткә:] Кит йүнһеҙ, ғүмер буйы [кәләш алмай] дилдалай булып йәшәмәҫһең инде.* Ш. Насыров.

**ДИЛЕ́ММА** [*рус.* 〈 *гр.*] *и.* **1.** *лог.* Ҡайһылыр береһен һайларға кәрәк булған ҡапма-ҡаршы ике фекер.

**2.** Икеһенең береһен һайлау ауыр булған ҡапма-ҡаршы хәл. *Ядро коралын һынауҙарҙы тыйmaйынса ядро арсеналдарын ҡыҫҡартыу ғына ядро һуғышы ҡурҡынысы дилеммаһынан сығыу юлын бирмәй.* «Совет Башҡортостаны», 1986, 16 ғинуар.

**ДИЛЕТА́НТ** [*рус.* 〈 *ит.*] *и. кит.* Махсус әҙерлеге, етерлек белеме булмаған көйө фән йәки сәнғәт менән шөғөлләнгән кеше.

**ДИЛЕТАНТЛЫҠ** *и. кит.* Фән, сәнғәт һ. б. менән махсус белеме, әҙерлеге булмаған көйө шөғөлләнеү эше.

**ДИЛО́ГИЯ** [*рус.* 〈 *гр.*] *и. әҙ.* Бер төрлө фекер, сюжет оҡшашлығы менән бәйләнгән бер авторҙың ике романы йәки ике драматик әҫәре. *«Ҡыҙылгвардеецтар», «Ҡыҙылармеецтар» дилогияһы сюжеты һәм композицион төҙөлөшө менән А. Таһировтың иң йыйнаҡ әҫәре.* Ә. Вахитов.

**ДИЛӘНКӘ** [*рус.* делянка] *и.* Ағасын ҡырҡыу өсөн билдәләнгән урман йәки берәй нәмә эшләү, төҙөү өсөн бүленгән ер өлөшө. *Ағасын ҡырҡыу өсөн бирелгән диләнкә. Диләнкәнән утын ташыу. Тәжрибә диләнкәһе. Диләнкә алыу. Диләнкә ҡырҡыу.* ■ *Конюх Сәлимгәрәй: .. Ат аҙбарын төҙөп бөтөрә алмайбыҙ. Хөкүмәт диләнкә бирҙе. Вәлиәхмәт аҡса юҡ, ти.* Б. Бикбай.

**ДИМ** *и.* Кешене нимәгәлер күндереү өсөн һөйләгән һүҙ; өгөт. *Кеше дименә йөрөү.*

● *Дим диңгеҙ кисерә.* Әйтем. *Яусы булмаһаң, дим һөйләмә.* Әйтем.

**ДИМАҒ** [*ғәр.*] *и. иҫк. кит.* Мейе. *[Йыһаншаның] димағы төрлө хыялдар вә фараздар берлә тулды.* З. Һаҙи.

**ДИМГЕЛ** *с. диал.* Тимгел. *Аҡ димгел. Ҡара димгел. Димгел булыу.*

**ДИМЛӘТЕҮ** *к. йөкм. ҡар.* **димләү.**

**ДИМЛӘҮ** *к.* **1.** Кешене нимәгәлер күндерергә тырышыу; өгөтләү. *Уҡырға димләү.* ■ *Бригадир Яҡуп Булатты колхозға инергә димләп ҡарай ҙа, уның күңеле тартмай.* Б. Бикбай.

**2.** Кемделер кейәү йәки кәләш итеп тәҡдим итеп өгөтләү. *Ҡыҙ димләү.* ■ *Нурислам ағайға беҙгә килеп эшләп йөрөгән Ғилмекәй тигән ҡатынды димләнеләр.* М. Ғафури. *Үгәй ҙә түгел, үҙ әсәйем һыҡтамай ҙа димләп ултыра* (Сеңләүҙән).

**ДИМЛӘШЕҮ** *к. урт. ярҙамл. ҡар.* **димләү.** *Бер-берэңдә димләшеү. Ҡыҙ димләшеү.* ■ *[Диләә:] Емеш еңгәм генә башымды ашаны. Бигерәк өгөтләп димләне шул. Етмәһә, Айҙарҙың оло бисәһе үҙе бит әле, ҡайта-ҡайта килеп димләште.* Һ. Дәүләтшина.

**ДИММӘ** [*ғәр.*] *и. иҫк.* Ҡарамаҡ. *Үҙ диммәңә алыу.* ■ *Уның өҫтөнә, мылтыҡ, ҡылыс, һөңгөлә һинең диммәңдә.* А. Таһиров.

**ДИМНӘҮ** *к. диал. ҡар.* **емләү 3.** *Бал димнәү.*

**ДИМСЕ** *и.* Кейәүгә сығарға, кәләш алырға, өйләнешергә димләүсе. *Димсе булып йөрөү.* ■ *Аяғым төшмәҫ ергә, башым төштө, димселәрҙең теле ҡороһон* (Сеңләүҙән).

● *Димсе диңгеҙ кистерә.* Мәҡәл.

**ДИН**[1] [*ғәр.*] *и.* Донъялағы бөтә нәмәне тәбиғәттән тыш көскә ҡайтарып ҡалдырған фәнни булмаған ҡараш һәм шуға нигеҙле йолалар системаһы. *Ислам дине. Христиан дине.* ■ *Беҙҙең эраның 7 быуатында Ғәрәп ярымутрауында, хәҙерге Мәккә, Мәҙинә ҡалалары тирәһендә йәшәгән ғәрәп халҡы араһында ислам дине барлыҡҡа килә.* Т. Баишев. **Дин башлығы** рухани (мулла, мәзин, мөфти һ. б.). **Дин тотоу** дингә ышанып, дини йолаларҙы үтәү. **Дин әһеле** *ҡар.* **дин башлығы.**

● *Динем өсөн түгел, көнөм өсөн.* Әйтем.

**ДИН**[2]: **дин кибеү** *диал.* тамаҡ кибеү, сарсау.

**ДИ́НА** [*рус.* 〈 *гр.*] *и. физ.* Механикала: көстө үлсәү берәмеге.

**ДИНАМИ́ЗМ** [*рус.*] *и. кит.* Эш, хәрәкәткә этәргән ҙур көс, дәрт. *Шиғырҙың динамизмы.* ■ *Инертлыҡ, идара итеү формаларының һәм методтарының ҡатып ҡалғанлығы, эштә динамизмдың кәмеүе, бюрократизмдың артыуы — былар бөтәһе лә эшкә ҙур ғына зыян килтерҙе. Йәмғиәт тормошонда торғонлоҡ күренештәре төҫмөрләнә башланы.* «Совет Башҡортостаны», 1986, 26 февраль.

**ДИНА́МИК** [*рус.*] *и.* Электродинамик һөйләткес. *[Күршем] ҡайһы ваҡыт өйҙә емерерҙәй итеп радиолаһын ҡысҡыртырға тотона. Динамигы бик көслө, тәҙрә быялалары зыңғырлап тора.* Р. Солтангәрәев.

**ДИНАМИ́К** *с.* **1.** Динамикаға (1 мәғ.) мөнәсәбәтле, көс, хәрәкәт менән бәйле. *Динамик баҫым. Динамик үҫеш.*

**2.** *күсм.* Эске көскә, хәрәкәткә бай; хәрәкәтсән. *Динамик образ. Динамик шиғыр.*

**ДИНА́МИКА** [*рус.* ⟨ *гр.*] *и.* **1.** Механиканың көс тәьҫирендә барлыҡҡа килгән хәрәкәт закондарын өйрәнә торған бүлеге. *Механизмдар динамикаһы.*

**2.** Ниҙеңдер хәрәкәте, үҙгәреше, үҫеше. *Пландың үтәлеш динамикаһы.* ■ *Асылыкүл үҙенең барлыҡҡа килеү тарихы, һыу режимының динамикаһы, йәнлек һәм хайуандар донъяһының үҙенсәлеге менән ҡыҙыҡлы.* «Совет Башҡортостаны», 1970, 17 июнь.

**ДИНАМИ́Т** [*рус.* ⟨ *гр.*] *и.* Тау-таш шартлатыуҙа һәм хәрби эштә ҡулланылған төп өлөшө нитроглицериндан торған шартлатҡыс матдә. *Динамит һалыу. Динамит менән шартлатыу.* ■ *Ҡайһы ҡаялалыр динамиттар таш аҡтарҙы, һауа ярыла.* Ғ. Сәләм.

**ДИНА́МО** [*рус.*] *и. иҫк.* Үҙгәрешһеҙ электр тогы эшләп сығара торған машина; электрик генератор.

**ДИНА́МО-МАШИ́НА** *и. ҡар.* **динамо.**

**ДИНАМО́МЕТР** [*рус.* ⟨ *гр.*] *и. физ.* Механик көстө үлсәү ҡорамалы; көс үлсәгес.

**ДИНА́Р** [*рус.*] *и.* **1.** Боронғо Римдағы алтын йәки көмөш аҡса.

**2.** Ираҡ, Югославия, Иордания, Тунис, Кувейт һ. б. ҡайһы бер илдәрҙә аҡса берәмеге.

**3.** Ирандың ваҡ аҡсаһы.

**ДИНА́СТИЯ** [*рус.* ⟨ *гр.*] *и.* **1.** Быуындан-быуынға килгән бер-бер артлы идара итеүсе батшалар нәҫеле. *Рәсәйҙә Романовтар династияһы.*

**2.** *күсм. һөйл.* Бер үк һөнәрҙе, эште дауам итеүселәр нәҫеле. *Эшселәр династияһы.*

**ДИ́НГО** [*рус.* ⟨ *ингл.*] *и.* Австралияла йәшәгән ҡырағай эт.

**ДИНДАР** [*ғәр.* + *фарс.*] *с. иҫк.* Динле. *Диндар кеше. Диндар булыу.* ■ *Шунда ҡая ярығынан ҡулына тиҫбе тотҡан ап-аҡ һаҡаллы бер диндар ҡарт килеп сыҡты.* «Алдар менән Зөһрә».

**ДИНДӘШ** *и.* Бер үк диндә тороусылар. *Диндәш булыу.* ■ *Әй диндәштәр, кәрендәштәр .. сарыф ҡылайыҡ дин юлында малдар* (Бәйеттән).

**ДИНЕҮ** *к. диал.* Аҡылдан, иҫтән яҙыу.

**ДИНИ** [*ғәр.*] *с.* **1.** Дингә ышаныуға нигеҙләнгән, дин менән бәйле. *Дини байрам. Дини йола. Дини ҡараш. Дини мәктәп. Дини фанатизм. Дини хөрәфәттәр.* ■ *Рус түрәләре һәм ҡайһы бер дини ғәҙәттәрҙән артыҡ ҡурҡмай торған башҡорт түрәләре йыйылған тирмәлә.* Һ. Дәүләтшина.

**2.** *ҡар.* **динле.** *Дини кеше.*

**ДИНИӘ:** **диниә назараты** мөфти етәкселегендәге юғары дин идараһы. *Ул [Өмөтбаев] диниә назаратынан алған бәләкәй генә эш хаҡына көн кисерә.* З. Шәрҡи.

**ДИНЛЕ** *с.* Дин тотҡан, хоҙайға ышанған; диндар, дини. *Динле кеше. Динле булыу.*

**ДИНОЗА́ВР** [*рус.* ⟨ *гр.*] *и.* Мезозой дәүерендә булып, хәҙер үлеп бөткән бик ҙур һөйрәлеүсе хайуандарҙың бер төрө.

**ДИНСЕ** *и.* Дин юлында йөрөгән кеше, дин әһеле. .. *Дин исламдан хәбәрҙар булмаған күп динселәр күрҙек.* М. Ғафури.

● *Динлenең өмөтө гүрҙә, динсенең өмөтө түрҙә.* Мәҡәл.

**ДИНСЕЛ** *с.* Динде нıҡ тотоусан. *Оло йәштә булыуына ҡарамаҫтан, олатай бик үк динсел түгел, донъя хәлдәре тураһында фекер йөрөтә торған бер кеше ине.* Б. Бикбай.

**ДИНҺЕҘ** *с.* Дин тотмаған, хоҙайға ышанмаған. *Динһеҙ кеше. Динһеҙ булыу.* ■ *Был өйҙә динле кеше хозяйка ғына. Сания ла динһеҙ, ләкин ул Ғүмәр кеүек артыҡ тышҡа сығармай, эсендә генә йөрөтә.* С. Агиш.

**ДИНҺЕҘЛЕК** *и.* Алланың барлығын кире ҡаҡҡан, дини хөрәфәттәргә ышанмаған, дини йолаларҙы тотмаған хәл; атеизм. *Динһеҙлек көсәйеү.* ■ *[Сафа:] Кем бар унда? Был ниндәй динһеҙлек? Мәйет барын белмәйһегеҙме ни?* Р. Ғабдрахманов. *Беҙҙең мөҡәддәс Рәсәй илендә динһеҙлек көсәйҙе.* Д. Юлтый.

**ДИН-ШӘРИҒӘТ** *и. йыйн.* Дин һәм шәриғәт закондары, йолалары.— *Был донъяла эшләгән ялғандарыңды, бысраҡтарыңды дин-шәриғәт алдында йыумаҡ булаһыңмы?* М. Тажи.

**ДИҢГЕҘ** [1] *и.* **1.** Ниндәйҙер кимәлдә ҡоро ер менән уратып алынған Донъя океанының бер өлөшө. *Балтик диңгеҙе. Ҡара диңгеҙ. Диңгеҙ буйы. Диңгеҙ яры. Диңгеҙ йәнлектәре. Диңгеҙ үҫемлектәре.* ■ *Карап, .. якорын алып, асыҡ диңгеҙгә юл тота. Киң диңгеҙҙең көслө тулҡындары һине ҡаршылай.* А. Таһиров. **Диңгеҙ һауаһы** диңгеҙ буйҙарына характерлы ҡырҡа тайпылышы булмаған дымлы һауа. **Ете диңгеҙ артында** бик алыҫта. / Бик ҙур күл йәки яһалма һыу ятҡылығы. *Мәскәү диңгеҙе.*

**2.** *күсм.* Сикһеҙ киң, сиге булмаған, икһеҙ-сикһеҙ күп нәмә. *Тормош диңгеҙе.* ■ *Сәғидуллин .. алдында торған халыҡ диңгеҙенә ҡарап ярты минутҡа тын ҡалды.* А. Карнай. *Ҡайнап торған көрәш диңгеҙенең тулҡындарын бәреп, .. барыһын ярып сыҡтыҡ, маҡталып.* Ғ. Амантай.

**3.** Ҡайһы бер ботаника һәм зоология терминдары составында ҡулланыла. *Диңгеҙ кәбеҫтәһе. Диңгеҙ ҡамышы. Диңгеҙ бесәйе. Диңгеҙ ҡыҫаһы. Диңгеҙ һыйыры. Диңгеҙ арыҫланы.*

● *Берәүҙең күңеле диңгеҙ, берәүҙең күңеле дуңғыҙ.* Мәҡәл.

**ДИҢГЕҘ** [2] *и. диал. ҡар.* **иигеҙ** 1.

**ДИҢГЕҘСЕ** *и.* **1.** Флотта хеҙмәт иткән кеше. *Диңгеҙсе булыу. Диңгеҙселәр клубы.*

**2.** *һөйл.* Диңгеҙҙе, диңгеҙ эшен яҡшы белгән кеше.

**ДИҢГЕҘСЕЛЕК** *и.* Диңгеҙҙә йөрөү шөғөлө, һөнәре.

**ДИҢГЕҮ** *к. диал.* Тиңкеү. *Балыҡтың башы диңгене.* М. Тажи.

**ДИҢГӘСӘЙ** *и.* диал. ҡар. **еңгәсәй** [2].

**ДИОПТРИЯ** [*рус.* ⟨ *гр.*] *и. физ.* Оптик быялаларҙы һ. б. яҡтылыҡ нурҙарының һыныу көсөн үлсәү берәмеге.

**ДИОРАМА** [*рус.* ⟨ *гр.*] *и.* **1.** Үтә күренмәле ерлектең (туҡыма, быяла һ. б.) ике яғына ла төшөрөлөп, яҡтыртҡанда дәүмәлле булып күренгән һүрәт.

**2.** Һүрәт алдына күләмле (макет, фигура һ. б.) нәмәләр урынлаштырылып эшләнеп, дөйөм күренеш тыуҙырылған һынлы сәнғәт әҫәре. *Севастополдәге һуғыш диорамаһы.*

**ДИПЛОМ** [*рус.* ⟨ *фр.*] *и.* **1.** Уҡыу йортон тамамлау йәки ниндәйҙер исем һәм дәрәжә бирелеү тураһындағы рәсми документ; таныҡлыҡ. *Инженер дипломы. Медицина фәндәре кандидаты дипломы. Диплом алыу. Диплом тапшырыу.* **Диплом эше** уҡыу йортон тамамлағанда башҡарыла торған үҙ аллы эш. *Диплом эше яҙыу.* ■ *Композитор З. Исмәғилов консерваторияны «бик яҡшы» билдәһе менән тамамлай. «Салауат Юлаев» операһы уның диплом эше була.* «Ағиҙел», 1968, № 5.

**2.** Конкурс, күргәҙмә һ. б. ерҙә яулаған уңыш, яҡшы эш һөҙөмтәһе өсөн бирелгән маҡтау ҡағыҙы. *Беренсе дәрәжәле диплом.*

**ДИПЛОМАНТ** [*рус.*] *и.* **1.** Диплом эше яҙған студент.

**2.** Диплом (2 мәғ.) менән бүләкләнгән кеше. *Ул [Зәкиә Арсланова] Бөтә Россия эстрада уҡыусылары конкурсында ике тапҡыр беренселекте алған, 1960 йылда дипломант булған.* «Башҡортостан ҡыҙы», 1969, № 6.

**ДИПЛОМАТ** [*рус.* ⟨ *фр.*] *и.* **1.** Сит илдәр менән дәүләт-ара бәйләнеш тәьмин итеү өсөн билдәләнгән вазифалы кеше. *Сит ил дипломаты. Дипломаттар ултырышы.*

**2.** *һөйл.* Кешеләр менән бик оҫта мөғәмәлә итә белгән кешегә ҡарата әйтелә. *Дипломат булыу.* ■ *Булһа .. Шәрәф мәжлестә — бәхетең, һал колаҡ: Ғилемең артыр, сөнки ул ысын ҡыҙыу бер дипломат!* Ш. Бабич.

**3.** *һөйл.* Кәрәк-яраҡ нәмә һалып, ҡулда йөрөтә торған бәләкәй сумаҙан. *Кун дипломат. Дипломат тотоп йөрөү.*

**ДИПЛОМАТИК** *с.* Дипломатияға мөнәсәбәтле, дипломатия менән бәйле. *Дипломатик хеҙмәт. Дипломатик мөнәсәбәт.* **Дипломатик вәкиллек** сит илдә дәүләттең рәсми вәкиле булып торған ойошма. **Дипломатик корпус** төрлө илдән килгән дипломатик вәкилдәр төркөмө. **Дипломатик курьер** дәүләт-ара бәйләнеш почтаһын йөрөткән кеше.

**ДИПЛОМАТИЯ** [*рус.* ⟨ *фр.*] *и.* **1.** Хөкүмәттең халыҡ-ара дәүләт политикаһын тормошҡа ашыра торған рәсми эшмәкәрлеге. *Ә беҙ йәшерен дипломатияға ҡаршыбыҙ, бөтә халыҡ алдында асыҡтан-асыҡ эш итәбеҙ.* В. И. Ленин, һ. әҫ., 2 т., 1962.

**2.** *һөйл.* Бер маҡсатҡа ирешеү өсөн ҡулланылған оҫталыҡ, сослоҡ.

**ДИПЛОМЛЫ** *с.* Уҡыу йортон тамамлап, диплом алған. *Дипломлы инженер.*

**ДИРАЙӘТ** [*ғәр.*] *и. иҫк. кит.* Зирәклек, аң.

□ **Дирайәт итеү** (*йәки* **ҡылыу**) аңлау, белеү. *Бән бер хикәйәт баян итәм, ишет, ҡыл дирайәт.* Һ. Сәлихов.

**ДИРЕКТИВ** [*рус.* директивный] *с.* Етәксе күрһәтмәләр тотҡан, директива булып торған. *Директив күрһәтмә. Директив ойошма. Директив органдар. Директив хат.*

**ДИРЕКТИВА** [*рус.* ⟨ *фр.* ⟨ *лат.*] *и.* Юғары ойошмалар тарафынан түбән ойошмаларға бирелеп, үтәлеше мотлаҡ булған етәксе күрһәтмә. *КПСС съезы директивалары. Директива биреү.*

**ДИРЕКТОР** [*рус.* ⟨ *лат*] *и.* Берәй предприятие, ойошма йәки уҡыу йортоноң етәксеһе; башлыҡ. *Завод директоры. Мәктәп директоры. Директор булыу. Директор итеп ҡуйыу.*

**ДИРЕКТОРАТ** [*рус.*] *и.* Ҙур предприятиеның баш директор етәкселегендәге директорҙар коллегияһы; дирекция.

**ДИРЕКТОРЛЫҠ** *и.* Директор хеҙмәте, вазифаһы. *Директорлыҡҡа тәҡдим итеү. Директорлыҡтан төшөрөү.*

**ДИРЕКЦИЯ** [*рус.* ⟨ *лат.*] *и.* Директор етәкселегендәге идара. *Дирекция ултырышы. Мәктәп дирекцияһы. Совхоз дирекцияһы. Театр дирекцияһы. Дирекция ултырышы.* / Шул идара урынлашҡан бүлмә йәки йорт. *Дирекцияға инеү.*

**ДИРИЖАБЛЬ** [*рус.* ⟨ *фр.*] *и.* Газ тултырылған корпуслы, винты һауа менән хәрәкәтҡә килә торған двигателле еңел оскос һауа аппараты; идара ителмәле аэростат. *Тыуар съездарға дирижаблдә килһен делегат.* Х. Ҡунаҡбай.

**ДИРИЖЁР** [*рус.* ⟨ *фр.*] *и.* Оркестр, хор, опера һәм балет спектаклдәренә етәкселек иткән кеше. *Баш дирижёр. Оркестр дирижёры. Дирижёр таяғы. Дирижёр пульты. Дирижёр булыу.*

**ДИРИЖЁРЛЫҠ** *и.* Дирижёр эше, вазифаһы. *Дирижёрлыҡ пульты.* **Дирижёрлыҡ итеү** музыкаль әҫәрҙе башҡарғанда оркестр йәки хор менән етәкселек итеү. ■ *Х. Ибраһимов бер нисә музыкаль ансамбль ойоштороп ебәрә, үҙе лә ансамбль составында уйнай һәм дирижёрлыҡ итә.* «Совет Башҡортостаны», 1976, 7 декабрь.

**ДИРИЖИРЛАУ** *к. кит.* Музыкаль әҫәр башҡарғанда оркестр йәки хор менән етәкселек итеү. *Оркестрҙы дирижирлау. Хорҙы дирижирлау.*

**ДИРҮГӘ** [*рус.* дерюга] *и. диал.* Сепрәк балаҫ. .. *Шәһәрбаныу менән Гөлмәҙинә үләнле йорт алдына йәйелгән дирүгә өҫтөнә аяҡтарын бөкләп ултыр[ҙылар].* Я. Хамматов.

**ДИРҺӘМ** [*ғәр.*] *и.* **1.** Марокконың аҡса берәмеге.

**2.** Боронғо ғәрәп көмөш тәңкәһе.

**3.** Египеттағы һәм Судандағы ҡиммәтле металл үлсәү берәмеге (3, 12 гр-ға тигеҙ).

**ДИСГАРМОНИЯ** [*рус.* ⟨ *гр.*] *и. муз.* Гармонияның боҙолоуы; көйһеҙлек.

**ДИСК** *и. махс.* **1.** Яҫы түңәрәк пластинка; ялпаҡ түңәрәк формаһындағы нәмә. / Спортта

ырғытыу, ташлау өсөн ҡулланылған түңәрәк нәмә. / Ялпаҡ түңәрәк рәүешендәге тешле йәки тешһеҙ бирәр ҡоролма, машина һ. б. детале.

**2.** Ҡул пулемётының, автоматтың патронлы яһаҡ ҡумтаһы. *Ярты диск патрон.* ■ *Ғабдулла .. автоматына яңы диск ҡуйҙы ла уң яҡҡа табан шыуышып китте* Ғ. Әхмәтшин.

**ДИ́СКАНТ** [*рус.* ⟨ *лат.*] *и.* Балаларға хас нәҙек юғары тауыш. / Шул тауыш менән йырлаған йырсы малай.

**ДИСКВАЛИФИКА́ЦИЯ** [*рус.*] *и.* Кемдеңдер ниндәйҙер эшкә һәләтһеҙ тип табылыуы, квалификацияһы юҡ тип белдерелеүе. / Берәй эште эшләй алмау, квалификацияның юғалыуы./ *спорт.* Спортсмендың ярышта ҡатнашыуҙан мәхрүм ителеүе.

**ДИСКВАЛИФИКАЦИЯЛАНЫУ** *к. төш. ҡар.* **дисквалификациялау.**

**ДИСКВАЛИФИКАЦИЯЛАУ** *к.* Квалификацияһын юҡҡа сығарыу, бөтөрөү. *Юристы дисквалификациялау.*

**ДИСКРЕДИТА́ЦИЯ** [*рус.*] *и.* Кемгә, нимәгәлер булған ышаныстың юғалыуы, кемдеңдер авторитеты төшөүе, нимәнеңдер әһәмиәте кәмеүе.

**ДИСКРЕДИТАЦИЯЛАНЫУ** *к. төш. ҡар.* **дискредитациялау.**

**ДИСКРЕДИТАЦИЯЛАУ** *к.* Кемгә, нимәгәлер булған ышанысты юғалтыу, кемдеңдер авторитетын һанламау, нимәнеңдер әһәмиәтен кәметеп, кесрәйтеп ҡарау.

**ДИСКРИМИНА́ЦИЯ** [*рус.* ⟨ *лат.*] *и.* Хоҡуҡтың сикләнеүе; хоҡуҡ тигеҙһеҙлеге. *Дискриминация үткәреү. Дискриминация яһау. Дискриминация политикаһы. Дискриминация саралары.*

**ДИСКРИМИНАЦИЯЛАУ** *к.* Дискриминация яһау; тигеҙ хоҡуҡтан мәхрүм итеү, хоҡуҡты сикләү.

**ДИСКУ́ССИЯ** [*рус.* ⟨ *лат.*] *и.* Ниндәйҙер бер мәсьәлә буйынса халыҡ алдында иркен үткәрелгән һүҙ көрәше; бәхәс. *Дискуссия барышында. Дискуссия алып барыу. Дискуссия үткәреү.*

**ДИСКЫ** *и. ҡар.* **диск.** *Магнитофондың дискылары аҡрын ғына әйләнә.* **Ф.** Лоҡманов.

**ДИСКЫЛАНЫУ** *к. төш. ҡар.* **дискылау.** *Ер ике тапҡыр дискыланды шунан һуң арыш сәселде.* «Совет Башҡортостаны», 1975, 30 июль.

**ДИСКЫЛАТЫУ** *к. йөкм. ҡар.* **дискылау.** *Ерҙе дискылатыу.*

**ДИСКЫЛАУ** *к.* Ерҙе йомшартыу маҡсатында дискылы тырма менән тырматыу. *Ерҙе һөргәндән һуң дискылау.* ■ *Көҙҙән мөмкин тиклем күберәк майҙанды һөрөп, уны дискылап ҡалдыҡ.* «Совет Башҡортостаны», 1986, 21 май.

**ДИСКЫЛЫ** *с.* Эшләй торған өлөшө тешле йәки осланған ҡырлы дискы рәүешендә булған (машина һ. б. механизмдарға ҡарата). *Дискылы быҫҡы. Дискылы сәскес.* ■ *.. Яңы ерҙе дискылы тырма менән ҡырҡтырып тырматып сәстеләр.* Ғ. Зөлҡәрнәев.

**ДИСЛОКА́ЦИЯ** [*рус.* ⟨ *фр.*] *и.* **1.** *хәрби* Ғәскәрҙең һәм караптарҙың тейешле урын, ергә урынлаштырылыуы (фронтта, һуғыш ваҡытында). *Дислокация планы. Дислокация картаһы. Дислокация яһау.* ■ *Иптәш полковник,— тине ул [майор Т. Кусимов] Шайморатовҡа,— 275-се полк бирелгән маршрут буйынса яңы дислокация урынына хәрәкәт итә.* Ә. Ихсан.

**2.** *геол.* Ер ҡабығы ҡатлауҙарының күсеүе.

**ДИСПАНСЕ́Р** [*рус.* ⟨ *фр.*] *и.* Ауырыуҙарҙы даими күҙәтеү аҫтында махсус дауалау һәм ауырыу булдырмау сараларын күреү менән шөғөлләнгән медицина учреждениеһы. *Онкология диспансеры. Тире ауырыуҙары диспансеры. Туберкулез диспансеры. Диспансерҙа иҫәптә тороу.*

**ДИСПАНСЕРЛАШТЫРЫУ** *к.* Диспансерға беркетеү.

**ДИСПЕПСИ́Я** [*рус.* ⟨ *гр.*] *и. мед.* Ашҡаҙан һәм эсәктең нормаль эшләүенең боҙолоуы. *Балаларҙағы диспепсия күпселектә дөрөҫ ашатмағандан, көн элек [алдан] имсәк ташлатҡандан була.* В. Ғүмәров.

**ДИСПЕ́РСИЯ** [*рус.* ⟨ *лат.*] *и. махс.* Бүленеш, тарҡалыш, таралыш.

♦ **Яҡтылыҡ дисперсияһы** *физ.* Яҡтылыҡтың призма аша үткәндә спектрҙың айырым-айырым төҫлө нурҙарына тарҡалышы.

**ДИСПЕ́ТЧЕР** [*рус.* ⟨ *ингл.*] *и.* Үҙәк пункттан транспорт йөрөшөн йәки предприятие эшен көйләп, яйға һалып ултырған хеҙмәткәр. *Автобаза диспетчеры. Диспетчер будкаһы. Диспетчер пульты.*

**ДИСПЕТЧЕРЛАШТЫРЫЛЫУ** *к. төш. ҡар.* **диспетчерлаштырыу.** *Промысла тулыһынса диспетчерлаштырылған.*

**ДИСПЕТЧЕРЛАШТЫРЫУ** *к.* Транспорт йөрөшөнә һәм хеҙмәт процесына идара эшен техник элемтә саралары ярҙамында үҙәкләштереү.

**ДИСПОЗИ́ЦИЯ** [*рус.* ⟨ *лат.*] *и. хәрби* Ғәскәрҙе, флотты һуғыш ҡырында йәки туҡтаған, торған ерендә урынлаштырыу планы.

**ДИСПРОПОРЦИОНАЛЬ** [*рус.* диспропорциональный] *с. кит.* Пропорцияһы булмаған, нисбәтһеҙ.

**ДИСПРОПО́РЦИЯ** [*рус.* ⟨ *фр.*] *и. кит.* Пропорция булмауы, нисбәтһеҙлек. *Мал үрсей, ә аҙыҡ базаһы насар. Торлаҡтар ҙа аҙ эшләнә. Шуға күрә малсылыҡта диспропорция килеп сыға.* «Совет Башҡортостаны», 1966, 21 ғинуар.

**ДИ́СПУТ** [*рус.* ⟨ *лат.*] *и.* Фәнни, әҙәби һ. б. тема буйынса халыҡ алдында үткәрелгән һүҙ көрәше; бәхәс. *Ҡыҙыҡлы диспут. Әҙәби диспут. Диспут ойоштороу. Диспутта ҡатнашыу.* ■ *Йәштәр асыҡтан-асыҡ әңгәмәләшергә, бәхәсләшеп алырға ярата, улар менән диспут үткәреү үҙен аҡлай.* Ғ. Шәрипов.

**ДИССЕРТА́НТ** [*рус.*] *и.* Диссертация яҡлаусы кеше. *Диссертанттың үҙ аллы фекер йөрөтөүе, һәр нәмәгә үҙенсә ҡарауы бик оҡшаны.* Т. Сәғитов.

**ДИССЕРТА́ЦИЯ** [*рус.* ⟨ *лат.*] *и.* Ғилми учреждениеның ғилми советы ултырышында ғилми дәрәжә алыу өсөн халыҡ алдында яҡланған ғилми эш. *Диссертация темаһы. Докторлыҡ диссертацияһы. Кандидатлыҡ диссертацияһы. Диссертация яҙыу. Диссертация яҡлау.* ■ *.. Диссертация ғилми дәрәжә алыу өсөн генә түгел, ә*

*уның ысын мәғәнәһендә фәнни хеҙмәт булырға, фәнгә ниндәйҙер өлөш индерергә тейеш.* Н. Мусин.

**ДИССИМИЛЯТИВ** [*рус.* диссимилятивный] *с.* Диссимиляцияға мөнәсәбәтле. *Диссимилятив күренеш. Диссимилятив процесс.*

**ДИССИМИЛЯЦИЯ** [*рус.* ⟨ *лат.*] *и.* **1.** *лингв.* Фонетик оҡшашлыҡты бөтөрә торған үҙгәреш; *киреһе* ассимиляция. *Эргәләш торған оҡшаш тартынҡы өндәрҙең диссимиляцияһы телдең бер фонетик законы булып тора.* Ж. Кейекбаев.

**2.** *биол.* Ҡатмарлы органик берләшмәләрҙең ябайыраҡ матдәләргә тарҡалыуы.

**ДИССИМИЛЯЦИЯЛАНЫУ** *к. лингв.* Үҙгәреш арҡаһында фонетик оҡшашлыҡ бөтөү (өндәргә ҡарата).

**ДИССОНАНС** [*рус.* ⟨ *фр.*] *и.* **1.** *муз.* Өндәрҙең, ауаздың гармонияһы булмауы, ярашһыҙлығы, килешһеҙлеге; аһәңһеҙлек; *киреһе* консонанс. *Диссонанс булып яңғырау.*

**2.** *күсм. һөйл.* Ниндәйҙер эш-хәлдәге ярашһыҙлыҡ, тарҡаулыҡ.

**ДИССОЦИАЦИЯ** [*рус.* ⟨ *лат.*] *и.* **1.** *физ., хим.* Молекулаларҙың бер нисә ябай өлөштәргә — молекула, атом, ион һ. б. тарҡалышы.

**2.** *психол.* Психик процестарҙың үҙ-ара бәйләнешенең боҙолоуы.

**ДИСТАНЦИОН** [*рус.* дистанционный] *с.* Билдәле бер алыҫлыҡта, күпмелер арала эш иткән. *Дистанцион идара. Дистанцион бомба.*

**ДИСТАНЦИЯ** [*рус.* ⟨ *лат.*] *и.* **1.** Ике аралағы алыҫлыҡ; ара. *Алыҫ дистанцияға йүгереүсе. Дистанциянан идара итеү. Дистанция бомбаһы.* / *спорт* Старт менән финиш араһы; ара. *Алыҫ дистанцияға йүгерешеү.*

**2.** Тимер юлында административ-техник бүленеш участкаһы. *Дистанция начальнигы.*

◆ **Дистанциянан сығыу** *спорт* бәйге, йүгереү ярыштары ваҡытында артабан ҡатнашыуҙан баш тартыу.

**ДИСТИЛЛЯТ** [*рус.*] *и.* Дистиллятор менән ҡыуып алынған шыйыҡ продукт. *Кәрәсин менән бензин нефттең дистилляттары.*

**ДИСТИЛЛЯТОР** [*рус.*] *и.* Дистилляция яһай торған аппарат.

**ДИСТИЛЛЯЦИЯ** [*рус.*] *и.* Шыйыҡлыҡтың ҡайнатып ҡыуыу юлы менән таҙартылыуы. *Дистилляция яһау.*

**ДИСТИЛЛЯЦИЯЛАНЫУ** *к. төш. ҡар.* **дистилляциялау.** *Дистилляцияланған һыу.*

**ДИСТИЛЛЯЦИЯЛАУ** *к.* Ҡайнатып ҡыуыу юлы менән таҙартыу, дистилляция яһау. *Һыуҙы дистилляциялау.*

**ДИСТРОФИК** [*рус.*] *и. һөйл.* Дистрофия менән ауырыған кеше.

**ДИСТРОФИК** *с.* Дистрофияға бәйләнешле, дистрофияға мөнәсәбәтле. *Дистрофик хәл. Дистрофик үҙгәреш.*

**ДИСТРОФИЯ** [*рус.* ⟨ *гр.*] *и.* Туҡыма һәм ағзалар туҡланышының боҙолоуы, үҙгәреше. *Йөрәк туҡымаһының дистрофияһы.*

**ДИСЦИПЛИНА** [1] [*рус.* ⟨ *лат.*] *и.* Коллективтағы бөтә кеше мәжбүри буйһонорға тейеш булған ныҡлы әхлаҡ, ҡылыҡ ҡағиҙәһе; тәртип. *Партия дисциплинаһы. Хеҙмәт дисциплинаһы. Хәрби дисциплина. Дисциплина һаҡлау.* ■ *Хеҙмәт коллективтары социалистик ярышты йәйелдерә, эштең алдынғы методтарын таратыуға, хеҙмәт дисциплинаһын нығытыуға булышлыҡ итә, үҙ ағзаларын коммунистик әхлаҡ рухында тәрбиәләй,* .. «Башҡорт АССР-ының конституцияһы», 1984.

**ДИСЦИПЛИНА** [2] [*рус.* ⟨ *лат.*] *и. ҡар.* **фән 2.**

**ДИСЦИПЛИНАЛЫ** *с.* Дисциплинаны тотҡан, дисциплинаға буйһонған, тәртипле. *Дисциплиналы уҡыусы. Дисциплиналы эшсе.*

**ДИСЦИПЛИНАР** [*рус.* дисциплинарный] *с.* Дисциплинаға мөнәсәбәтле. / Тәртип боҙоу менән бәйле. *Дисциплинар яза.* **Дисциплинар устав** хәрби тәртип ҡағиҙәләрен билдәләй торған рәсми документ.

◆ **Дисциплинар часть** (*йәки* **рота**) хөкөмгә тартылған хәрбиҙәргә яза атҡарыу өсөн тәғәйенләнгән махсус хәрби часть. *[Офицер:] Әгәр ҙә арағыҙҙағы хыянатсыларҙы бөгөн үк тотоп бирмәһәгеҙ, барығыҙҙы ла дисциплинар батальонға таратабыҙ.* Д. Юлтый.

**ДИСӘТИНӘ** [*рус.* десятина] *и. иҫк.* Гектарҙың 1,09 өлөшөнә тиң булған (2400 кв. сажинға тигеҙ) метрик системаға ҡәҙәр ҡулланылған элекке ер үлсәү берәмеге. *Өс дисәтинә ер. Бер дисәтинә арыш.* ■ *Беҙ бер ваҡытта ла ярты дисәтинәнән артыҡ иген сәсә алманыҡ.* Т. Йәнәби.

**ДИСӘТИНӘЛӘП** *р. иҫк.* Дисәтинәгә һалып. *Дисәтинәләп үлсәү. Дисәтинәләп бүлеп сығыу.*

**ДИСӘТНИК** [*рус.* десятник] *и.* **1.** Төҙөү эшендәге эшселәр төркөмөнөң башлығы; ун башы. *Дисәтник итеп ҡуйыу.* ■ *Василий Павловичтың көнө төҙөлөштәрҙә уҙа, ул дисәтник булып эшләй.* Р. Низамов.

**2.** *ҡар.* **дисәтский.** *Староста .. ир-аттың береһен дә ҡалдырман волость өйөнә саҡырырға ҡушып, үҙенең дисәтниктәрен йүгертте.* Һ. Дәүләтшина.

**ДИСӘТСКИЙ** [*рус.* десятский] *и.* Революцияға тиклемге Рәсәйлә ауылда крәҫтиәндәр араһынан һайланып ҡуйылып полицейский вазифаһын үтәгән кеше. *Ғариф дисәтскийҙәрҙе саҡыртты, уларға ауыл осондағы соҡорҙоң күперен яңыртып һалыу өсөн ат менән өс-дүрт кеше ҡыуырға ҡушты.* Ж. Кейекбаев. *Тәҙрә һайын йөрөйҙәр дисәтский саҡырып, йәмәғәтем, балаларым илашалар аҡырып* (Бәйеттән).

**ДИУАН** [1] [*фарс.*] *и.* Элекке Төркиәнең солтан янындағы юғары түрәләр советы. *Диуан ултырышы.*

**ДИУАН** [2] [*фарс.*] *и. иҫк. кит. әҙ.* Көнсығыш әҙәбиәтендә лирик шиғырҙар йыйынтығы.

**ДИУАНА** [*фарс.*] *с.* **1.** Аҡылы юҡ; йүләр, тиле. *Мин үҙем бер дәрдмәнд диуанамын, ҡайҙа бер ғалим күрһәм, ҡыуанамын.* Аҡмулла. *Фани донъяларҙы бер уйлаһаң, башҡынайың булыр диуана* (Халыҡ йырынан). **Башты диуанаға һалыу** махсус рәүештә ниҙелер аңламаған булып ҡыланыу, уға иғтибар итмәү. *[Ханов:] Борһанов, башыңды диуанаға һалма, һиңә лә, миңә лә йәшәргә кәрәк, ә шелтәләр гел яуа башлаһа ялҡыта ул.* И. Абдуллин.

**2.** *дини* Бөтә күңелен дингә һалып, донъяуи нәмәнән баш тартып, ил буйлап йөрөгән дини

кеше тураһында әйтелә. *Диуана булып йөрөү.*

**ДИУАНАЛАНЫУ** *ҡ.* **1.** Диуана (1 мәғ.) булыу, диуанаға әйләнеү. *Зөлхизә Йәнтиҙе тиң дә күрмәй, бала төҫө лә күрмәй. Йәнти ҡулында оҙаҡ тормай һарғайып, кибеп, диуаналанып үлә.* М. Буранғолов.

**2.** Диуаналарса, аҡылһыҙҙарса ҡыланыу. *[Хәсби:] Һин диуаналанма!.. Ҡаймағымды әрәм итә яҙҙың, алйыған баш!* Ҡ. Даян.

**ДИУАНАЛЫҠ** *и.* Диуана кешегә хас сифаттар; диуана булған хәл. *Диуаналыҡ менән булды.*

**ДИУАР** [*фарс.*] *и. иҫк.* **1.** Стена, ҡойма. *Таш диуар һелкенде лә, күҙ алдымда ҙур ер тишеге пәйҙә булды.* «Алдар менән Зөһрә».

**2.** *күсм.* Тормоштағы кәртә, ҡаршылыҡтар. *Әшселәрҙең һөжүменән ҡыйратылды таш диуар.* М. Ғафури.

**ДИФИРА́МБ** [*рус.* ⟨ *гр.*] *и.* **1.** Боронғо Грецияла: Дионис тигән алла хөрмәтенә башҡарылған тантаналы күмәк йыр. / Ода һымаҡ лирик маҡтау шиғыры.

**2.** *һөйл.* Күккә күтәреп маҡтаған һүҙ.

♦ **Дифирамб йырлау** ярамһыҡланып, кешене самаһыҙ маҡтау.

**ДИФРА́КЦИЯ** [*рус.* ⟨ *лат.*] *и. физ.* Юлда осраған ҡаршылыҡ, тотҡарлыҡтарҙы яҡтылыҡ, тауыш һ. б. тулҡындар менән уратып, ситләтеп үтеү. *Яҡтылыҡ дифракцияһы.*

**ДИФТЕРИ́Я** [*рус.* ⟨ *фр.*] *и.* Күберәк балаларҙа була торған йоғошло тамаҡ ауырыуы. *Дифтерия бик йоғошло ауырыу. Уның микробтары тамаҡ, танау эсенең тиресәһенә ултыра.* В. Ғүмәров.

**ДИФТО́НГ** [*рус.* ⟨ *гр.*] *и. лингв.* Бергә ҡушып әйтелеп, бер ижек эсенә ингән ике һуҙынҡы өн.

**ДИФТОНГЛАШЫУ** *ҡ.* Дифтонгҡа әйләнеү (ябай һуҙынҡы өн тураһында).

**ДИФФЕРЕНЦИА́Л** [*рус.* ⟨ *лат.*] *и.* **1.** *мат.* Функция үҫемсәһенең төп һыҙыҡса өлөшө.

**2.** *тех.* Машинаның һәр йөрөткөс тәгәрмәсенә үҙ тиҙлеге менән әйләнергә мөмкинлек биргән механизм.

**ДИФФЕРЕНЦИАЛЬ** [*рус.* дифференциальный] *с.* **1.** Төрлө шартҡа ҡарата төрлө булған. *Дифференциаль метод. Дифференциаль тариф.*

**2.** *мат.* Дифференциалға (1 мәғ.) мөнәсәбәтле. *Дифференциаль геометрия. Дифференциаль тигеҙлек.*

**ДИФФЕРЕНЦИА́ЦИЯ** [*рус.* ⟨ *лат.*] *и. кит.* Нимәнеңдер төрлө элементтарға айырылышы, бүленеше. *Башҡорт халыҡ мәкәлдәренең байтаҡ өлөшө синфи дифференциация үҫә һәм көсәйә барған ауыл тормошон сағылдыра.* Ә. Харисов.

**ДИФФЕРЕНЦИАЦИЯЛАНЫУ** *ҡ.* **1.** *төш. ҡар.* **дифференциациялау.**

**2.** *ҡайт. ҡар.* **дифференциациялау.**

**ДИФФЕРЕНЦИАЦИЯЛАУ** *ҡ.* **1.** *кит.* Дифференциация үткәреү.

**2.** *мат.* Дифференциал (1 мәғ.) табыу.

**ДИФФУ́ЗИЯ** [*рус.* ⟨ *лат.*] *и. физ.* Йылылыҡ хәрәкәте арҡаһында бер матдә атомдары йәки молекулаларының икенсе матдә атомдары йәки молекулалары менән аралашыуы. *Газдар диффузияһы. Шыйыҡлыҡтар диффузияһы.*

**ДИХАЙ** *с. диал. ҡар.* **бөтөнләй** 3. *Беребеҙ унда, беребеҙ бында инек, ҡауыштырҙы дихай ятҡарҙы.* С. Ҡудаш.

**ДИХАЯТ** [*ғәр.*] *и.* Бөтөнләй ят, ете ят.

**ДИҺҠАН** [*фарс.*] *и.* Урта Азиялағы ауыл хужалығы эшсеһе, игенсе; крәҫтиән. *Баҫмасылар килерен ишеткәс тә, диһҡандарҙың күпселеге тау араһына ҡасып бөткән ине.* В. Хәсән.

**ДИҺЛИЗ** [*ғәр.*] *и. иҫк. кит.* Алғы бүлмә. *Йәриәнән йыр йырлатыу ғәҙәт булған ғәйет көн пәйғәмбәрҙең диһлизендә.* Аҡмулла.

**ДИШВАР** [*фарс.*] *с. иҫк.* Ауыр, мөшкөл. *[Йосоп:] Хәлем дишвар, тәнем мәжрух, күңелем мәғмүм.* «Йосоп вә Зөләйхә».

**ДИЯНӘТ** [*ғәр.*] *и. иҫк.* Динселлек. *Ололарҙан ярҙам юҡ, иғәнәт юҡ, ғауамдарҙа ғилем, диянәт юҡ.* Ш. Әминев.

**ДИЯНӘТЛЕ** *с. иҫк.* Динсел, иманлы. *Ул [Мөхтәр] хәҙер әллә ҡасандан бирле алланан теләп килгән маҡсудына ирешпе: ул инде диянәтле .. бер йәш хәҙрәт булды.* Һ. Сәғҙи.

**ДИЯР** [*ғәр.*] *и.* Ер, ил; дар. *Кеше китәрме ихтияр илән тыуған-үҫкән диярынан* (Бәйеттән).

**ДНЕВА́ЛЬНЫЙ** [*рус.*] *и.* Хәрби бүлектә тәртип булдырыу, милекте һ. б. һаҡлау өсөн дежурныйға ярҙамсы итеп тәүлеккә ҡуйылған һалдат. *Дневальный булыу. Дневальный итеп ҡалдырыу.* ■ *Кис менән казарма тәртибе боҙолдо .. Дневальныйҙың һәм дежурныйҙың һүҙенә ҡарамай төнгө ун икегә тиклем шаулаштылар.* Д. Юлтый.

**ДОБРОВО́ЛЕЦ** [*рус.*] *и. һөйл.* Һуғыш ваҡытында үҙ теләге менән армияға киткән кеше. *Доброволец булыу.* ■ *Доброволец булып армияға киттем. .. Әсәйем илап ҡалды.* Ғ. Әмири.

**ДОВЕ́РЕННОСТЬ** [*рус.*] *и.* Шуны биргән кеше исеменән эш итергә хоҡуҡ биргән документ. *Доверенностҡа мисәт ҡуйыу. Доверенность менән аҡса алыу. Доверенность биреү. Доверенность яҙыу.*

**ДОВЕ́РЕННЫЙ** [*рус.*] *и. тар.* Яуаплы бер йәмғиәт йомошон башҡарыу өсөн вәкил итеп һайланған кеше. *Волость доверенныйы.* ■ *Ҡолморҙа старшина һәм ер доверенныйҙары ерҙән алтын ҡаҙҙырыу өсөн арендаға һатырға риза булып, аҫтыртын ҡултамға һалдылар.* Т. Хәйбуллин.

**ДО́ГМА** [*рус.* ⟨ *гр.*] *и.* Бер ҡасан да, һәр төрлө хәлдә лә үҙгәрмәй торған бәхәсһеҙ хәҡиҡәт тип ҡаралған ҡараш, ҡағиҙә. .. *Йолалар яңырған донъяла догмалар ҡыйралған ватылған, доғалар сүплеккә атылған.* Р. Бикбаев. *Ленин .. «Марксизм — ул ҡатып ҡалған догма түгел, ниндәйҙер тамамланған, әҙер, үҙгәрешһеҙ бер тәғлимәт түгел ..» тип яҙҙы.* «Совет Башҡортостаны», 1985, 23 апрель.

**ДОГМАЛАШТЫРЫЛЫУ** *ҡ. төш. ҡар.* **догмалаштырыу.**

**ДОГМАЛАШТЫРЫУ** *ҡ.* Догмаға әйләндереү.

**ДО́ГМАТ** [*рус.* ⟨ *гр.*] *и.* **1.** Дин тәғлимәтендә дөрөҫ, бәхәсһеҙ тип ҡаралған төп ҡағиҙә. *Ислам диненең әһелдәре .. дини догматтарҙы хәҙерге заманға яраҡлаштырырға тырышалар.* «Ағиҙел», 1968, № 10.

**2.** *ҡар.* **догма.**

**ДОГМАТИ́ЗМ** [*рус.*] *и.* Билдәле булған һөҙөмтә һәм теорияларға тәңкитһеҙ ҡараған догмаларға таянған фекерләү ысулы.

**ДОГМА́ТИК** [*рус.*] *и.* Догматизм яҡлы, догматизмға бирелгән кеше. *Догматиктар ҡарашы.*

**ДОГМАТИ́К** [*рус.*] *с.* Догмаларға ҡоролған, догмаларға нигеҙләнгән. *Догматик ҡараш. Догматик фекер. Догматик рәүештә.*

**ДОГОВО́Р** [*рус.*] *и.* Үҙ-ара шарт, йөкләмәләр ҡуйып, яҙма рәүештә йәки телдән төҙөлгән килешеү. *Дуҫлыҡ һәм ярҙам договоры. Солох договоры. Тыныслыҡ договоры. Договор буйынса. Договор төҙөшөү. Договорға ҡул ҡуйыу. Договорҙы өҙөү.*

**ДОҒА** [*ғәр.*] *и. дини* Теләк, үтенес белдереп, аллаға мөрәжәғәт иткән һүҙ. *Доға уҡыу. Доға ятлау.* ■ *Иртәнсәк китәсәк кешеләр .. мулла янына инеп, хәйер биреп, доға алдылар.* Һ. Дәүләтшиина. **Бәд доға** насар теләкле, ҡарғышлы доға; яман доға.

□ **Доға ҡылыу** доға уҡып, ҡуш ус менән битте һыйпау. *[Тайфа:] Доға ҡылып, саҙаҡа алырға мин гәрипме ни?* Н. Ҡәрип. *Зөһрә ҡыҙҙы насип ит, тип доға ҡылдым тәңремә.* Ш. Бабич. **Ҡул һырты менән доға ҡылыу** насар теләк теләп, ике ҡул һырты менән битте һыйпау.

**ДОҒАИ** *с. иҫк.* Доғаға бәйле, доға уҡып әйтелгән; доғалы.

◆ **Доғаи сәләм** яҡшы теләкле сәләм. *«Бәгдә хәләл жефетемә, һөйөклө улым Кәлимуллага күңдин күп доғаи сәләмләремде күндергейһеҙ» — тип яҙылған ине хатта.* Ғ. Хәйри.

**ДОҒАЛЫҠ** *и. дини* Доға яҙылған китап йәки ҡағыҙ. *Ул [мулла] кешеләргә доғалыҡ, тишекле ясин яҙып биргән, ти* (Әкиәттән).

**ДОҒАСЫ** *и.* Мәрхүмгә бағышлап доға ҡылыусы.— *Ҡартайғанбыҙ хәҙер, балабыҙ юҡ. Беҙгә кәрәк артта доғасы.* Д. Юлтый.

**ДО́ЗА** [*рус.* ⟨ *гр.*] *и.* Дарыуҙың бер мәртәбәгә йәки бер көнгә билдәләнгән билдәле бер миҡдары; өлөш. *Дарыу дозаһы. Ҙур доза.* / Билдәле ваҡыт эсендә кемгә йәки нәмәгә тәьҫир итә торған берәй энергияның билдәле бер миҡдары. *Радиактив нурҙар менән нурланыу дозаһы.*

**ДОЗАЛАНЫУ** *ҡ. һөйл. төш. ҡар.* **дозалау.** *Дозаланған дарыу.*

**ДОЗАЛАУ** *ҡ. һөйл.* Дозаға һалыу. *Дарыуҙы дозалау. Дозалап биреү. Дозалап үлсәү.*

**ДОЗАХ** [*фарс.*] *и. иҫк. кит.* Йәһәннәм; тамуҡ. *Ут йөрөй үҙәктә, эс яна дозахта.* Ш. Бабич.

**ДОЗО́Р** [*рус.*] *и.* **1.** Разведка һәм һаҡ өсөн ебәрелгән бәләкәй төркөм. *Төнгө дозор.* ■ *Дозор ауылда дошман юҡлығын хәбәр итте.* Ә. Вәли. **Дозорҙа тороу** нимәнелер һаҡлау, күҙәтеү бурысын үтәү. **Дозорға сығыу** *шул уҡ* **дозорҙа тороу.**

**2.** *һөйл.* Шул төркөмдәге кеше. *Дозорҙарҙы таратыу.*

**ДОК** [*рус.* ⟨ *ингл.*] *и.* Порттағы караптар ремонтлай торған урын. *Йөҙмә док.*

**ДО́КЕР** [*рус.* ⟨ *ингл.*] *и.* Портта йөк ташыусы, йөк тейәүсе; док эшсеһе.

**ДОКЛА́Д** [*рус.*] *и.* Билдәле бер темаға арналған халыҡ алдында һөйләгән телмәр. *Отчет докладны. Доклад һөйләү. Доклад яһау. Доклад яҙыу.* **Өҫтәмә доклад** төп докладҡа өҫтәп һөйләнгән бәләкәй доклад.

**ДОКЛАДНОЙ** [*рус.* докладная] *и. һөйл.* Етәксегә яҙып биргән эш тураһындағы рәсми белдереү. *Докладной яҙыу.* ■ *[Аҡсулпанов:] Мин үҙебеҙҙең ҡарашты нигеҙләп докладной әҙерләп ҡуям.* Ғ. Ғүмәр.

**ДОКЛАДСЫ** *и.* Доклад һөйләүсе. *Докладсы билдәләү.*

**ДО́КТОР** [*рус.* ⟨ *лат.*] *и.* **1.** *һөйл.* Врач. *Егетте оҙаҡ ҡаранылар. Доктор арҡаһынан, биленән, күкрәгенән тыңлап ҡараны.* А. Таһиров.

**2.** Диссертация яҡлау нигеҙендә бирелә торған иң юғары ғилми дәрәжә һәм шул дәрәжәне алған кеше. *Тарих фәндәре докторы. Фән докторы булыу.*

**ДОКТОРА́НТ** [*рус.*] *и.* Докторлыҡ диссертацияһы әҙерләү өсөн ғилми ойошмаға беркетелгән ғалим.

**ДОКТОРАНТУ́РА** [*рус.*] *и.* СССР Фәндәр Академияһының ғилми-тикшеренеү институттары янындағы ғилми хеҙмәткәрҙәр, фән докторҙары әҙерләү системаһы. *Докторонтурала булыу.*

**ДОКТОРЛЫҠ** *и.* **1.** Доктор (1 мәғ.) һөнәре һәм вазифаһы, эше.

**2.** Доктор (2 мәғ.) дәрәжәһе; фәндәр докторы, тигән ғилми дәрәжә. *Докторлыҡ диссертацияһы яҙыу. Докторлыҡ диссертацияһы яҡлау.*

**ДОКТРИ́НА** [*рус.* ⟨ *лат*] *и. кит.* Ғилми йәки философик теория, система. *Дәүләт доктринаһы. Ғилми доктрина. Марксизмдың ғилми доктринаһы.*

**ДОКТРИНЕ́Р** [*рус.*] *и. кит.* Ниндәйҙер бер тормоштан айырылған доктринаға күҙ йомоп эйәргән кеше.

**ДОКУМЕ́НТ** [*рус.* ⟨ *лат.*] *и.* **1.** Берәй нәмәне раҫлаған, нимәгәлер хоҡуҡ бирә торған рәсми эш ҡағыҙы. *Технологик документ.* ■ *Договорға ҡултамға һалыр ваҡыт етте. Шунан ул ябай яҙыу хәленән сығып, юридик көскә эйә булған бер документҡа әйләнәсәк.* К. Мәргән.

**2.** Кешенең шәхесен раҫлаған ҡағыҙ; таныҡлыҡ. *Документ күрһәтеү.* ■ *— Һеҙ ябай һалдат түгел, һеҙҙең документтарығыҙҙы тикшерергә кәрәк.* Д. Юлтый.

**3.** *кит.* Тарихи әһәмиәткә эйә булған әҙәби әҫәр, һүрәт, яҙма һ. б. *Тарихи документтар.*

**ДОКУМЕНТАЛЬ** [*рус.* документальный] *с.* Документҡа нигеҙләнгән, документ менән раҫланған. *Документаль әҫәр.* / Документ булып торған. *Документаль материал.*

◆ **Документаль фильм** ысын булған хәлде, фактты күрһәткән фильм. *Документаль фильм күрһәтеү.*

**ДОКУМЕНТА́ЦИЯ** [*рус.*] *и.* Документтар (1 мәғ.) йыйылмаһы. *Техник документация. Документация әҙерләү.*

**ДОКУМЕНТЛАШТЫРЫЛЫУ** *ҡ. төш. ҡар.* **документлаштырыу.**

**ДОКУМЕНТЛАШТЫРЫУ** *ҡ.* Документтар (1 мәғ.) менән нигеҙләү, раҫлау. *Алынған тауарҙы документлаштырыу. Клуб һалыу өсөн алынасаҡ материалдарҙы документлаштырып ҡайтырға кәрәк.*

**ДО́ЛЛАР** [*рус.* ⟨ *ингл.*] *и.* АҠШ, Канада, Австралия һәм ҡайһы бер башҡа илдәрҙәге аҡса берәмеге. *Американың ҡомһоҙ бүреләре эҙләй һаман доллар ҡорбанын.* Ғ. Ғүмәр.

**ДОЛОМИ́Т** [*рус.* ⟨ *фр.*] *и.* Составында кальций менән магнезий булған буҙ таш, минерал (быяла, көршәк һ. б. иэмә эшләп сығарыуҙа ҡулланыла). *Көньяҡ Уралдың был өлөшөндә бөтә тау массивтары ла һәүерташ, кварцит, ҡырсынташ, эзбизташ, доломит ҡатламдарынан тора.* Д. Бураҡаев.

**ДОЛОТО́** [*рус.*] *и. ҡар.* **бырау.**

**ДОМБОР** *оҡш.* Ауыр нәмә ҡыуышлыҡ эсенә ҡағылып-һуғылып төшкәндә сыҡҡан тауышты белдергән һүҙ. *Домбор итеү. Домбор итеп ҡалыу.*

**ДОМБОР-ДОМБОР** *оҡш.* Ҡабат-ҡабат домбор иткән тауышты белдергән һүҙ. *Домбор-домбор итеү. Домбор-домбор килеү.*

**ДОМБОРАУ** *ҡ. диал.* Доноу. *Бер мәлде Ҡашҡар үҙәктең үр яғына ҡарап домборап сығып китте.* С. Кулибай.

**ДОМБОРЛАУ** *ҡ.* Домбор-домбор итеү, домбор-домбор килеү. *Күнәк мәкегә домборлап төшөп китте.*

**ДОМИНА́НТА** [*рус.* ⟨ *ит.*] *и. кит.* Нимәнеңдер бер төп ҡушымтаһын тәшкил иткән төп сифат йәки төп өлөш; өҫтөнлөк иткән төп идея. *Доминанта булыу.* ■ *Ҡайһы хромосомалағы гендың көслөрәк булыуына ҡарап, бала йә атаһына, йә әсәһенә оҡшай. Атаһына оҡшаһа — ата сифаты доминанта алды тиҙәр.* Ә. Мифтахова.

**ДОМИНАНТЛЫҠ** *и. кит.* Өҫтөнлөк хәле, өҫтөн булған күренеш. *Нәҫелдә бер билдәнең өҫтөнлөк алыуы доминантлыҡ тип атала.*

**ДОМИНИО́Н** [*рус.* ⟨ *ингл.*] *и.* Элек Британия империяһына ингән, ә һуңынан (1947 йылдан һуң) Британияның милләттәр берләшмәһенең ағзаһы сифатында Англия короленә буйһонған үҙ аллы идара ителгән илдәрҙең (элекке колонияларҙың) атамаһы.

**ДОМИНО́** [*рус.* ⟨ *ит.*] *и.* Төрлө һандағы төр-төклө 28 шаҡмаҡ һәм шул шаҡмаҡтар менән уйнай торған уйын. *Домино уйнау.* ■ *Клуб алдындағы оҙонса йәшел өҫтәлдәр тирәһендә берәүҙәр шау-гөр килеп домино һуға.* Н. Иҙелбай.

**ДОМКРА́Т** [*рус.* ⟨ *гол.*] *и.* Ауыр нәмәләрҙе бер аҙ күтәртә торған механизм. *Домкрат менән күтәртеү.* ■ *Беҙ Саша менән икәү домкрат алып, машинаны күтәртеп, шөрөптәрен борҙоҡ.* Н. Нәжми.

**ДО́МНА** [*рус.*] *и.*, **домна мейесе** Тимер рудаһынан суйын ҡоя торған шахта мейесе. *Был ерҙәрҙе рус купецтары һатып алғас, француз Пашков тимер тимер рудаһы иретер өсөн домна мейесе төҙҙөргән.* «Башҡорт легендалары», 1960.

**ДОМНАСЫ** *и.* Домна мейесен төҙөү йәки хеҙмәтләндереү эшендәге белгес (эшсе, инженер һ. б.). *Домнасылар бригадаһы.*

**ДОМОУПРАВЛЕ́НИЕ** *и. һөйл.* Йорт идаралығы (*ҡар.* **йорт**).

**ДОНГ** [*рус.*] *и.* Вьетнамың аҡса берәмеге.

**ДОНДОРОУ** *ҡ. ҡар.* **доноу.** *Дондороп сабып китеү.*

**ДОНДОРТОУ** *ҡ. ҡар.* **доноу.** *Уйнаҡлап торған айғыр дондортоп сығып та китте.* Р. Солтангәрәев.

**ДОНЕСЕ́НИЕ** [*рус.*] *и.* Етәксегә, башлыҡҡа нимәләр тураһында телдән йәки яҙма рәүештә тапшырылған рәсми хәбәр. *Донесение ебәреү. Донесение яҙыу.*

**ДО́ННИК** [*рус.*] *и. бот.* Ҡуҙаҡлылар ғаиләһенә ҡарап, мал аҙығы һәм сәскәһенән бал алыу өсөн үҫтерелә торған үҫемлек; борҡон. *Һары донник.*

**ДО́НОР** [*рус.* ⟨ *фр.*] *и.* Ауырыу һәм яралы кешеләргә ебәреү өсөн үҙенең ҡанын биреүсе. *Донорҙар пункты. Доно булыу.* ■ *Бөйөк Ватан һуғышы йылдарында миллионлаған донор Тыуған ил һаҡсыларының йәнен ҡотҡарыу өсөн үҙ ҡанын бирҙе.* «Совет Башҡортостаны», 1968, 1 октябрь.

**ДОНО́С** [*рус.*] *и.* Кемделер нимә тураһындалыр ғәйепләп, уның өҫтөнән власть вәкилдәреиә еткерелгән йәшерен хәбәр; ошаҡ. *Донос яҙыу. Донос яҙыу.* ■ *Кемдеңдер доносы буйынса, Фәтхиҙе ҡулға алырға тип, ауылға ҡаҙаҡтар килә.* Ә. Чаныш.

**ДОНОССЫ** *и.* Донос яҙыусы; ошаҡсы.

**ДОНОУ** *ҡ.* Бик шәп итеп йүгереү, сабып китеү; йән-фарман елдереү. *Доноп сабыу.* ■ *Әхмәт бәләкәй туры атҡа менеп,.. саң борҡотоп урам буйлап доноп сығып китте.* И. Көҫәпҡол.

**ДОНЪЯ** [*ғәр.*] *и.* **1.** Сикһеҙ киң арауыҡтағы бөтә материаль есемдәр берәмеге; йыһан. *Донъяның барлыҡҡа килеүе.*

**2.** Ер шарының бөтә булған өҫтө, унда булған барлыҡ тәбиғәт, мөхит. *Донъя өлөштәре. Донъя йөҙө. Донъя гиҙеү.* ■ *Донъяны мөһабәт тауҙар, ярһыу диңгеҙ һәм океандар, йәшел урмандар биләй.* Ғ. Әмири. *Их, донъя яҡтырған, ергә түшәленгән аҡ юрған.* Ғ. Амантай. *Донъяла күпме халыҡ бар, күпме тел бар донъяла.* Р. Ниғмәти. *Күрәһегеҙ донъя ҡап-ҡара, асылғандар бикле ҡапҡалар!* М. Кәрим.

**3.** Кеше йәшәгән ер; планета, йыһан. *Бөтә донъя пролетарийҙары, берләшегеҙ! Бөтә донъя Тыныслыҡ Советы. Бөтә донъя йәштәре көнө. Бөтә донъя һуғышы. Донъя тарихы. Донъя беренселеге. Донъя стандарттары кимәле. Донъя рекорды ҡуйыу.* ■ *Империализм һуғышынан тыуған объектив шарттар, бөтә кешелек донъяһын баҫҡыска ҡуйҙы: ...* Д. Юлтый. *Ҡайһы йүнәлешкә генә барманы юл именлеген һаҡлап донъяның.* Х. Ғиләжев. / Тирә-йүн, тирә-йүндәге кешеләр. *Донъя тултырып хәбәр һөйләү.* ■ *Һоро айыу ҙа ошо илаһи матурлыҡ эсендә үҙенең дә йәшәүен, уны ла онотоорға ярамауын донъяға белдерергә ашыға.* З. Биишева.

**4.** Йәнле тәбиғәттең айырым бер өлкәһе. *Тереклек донъяһы. Хайуандар донъяһы.* ■ *Ер аҫты донъяһын үҙҙәренең .. казармалары кеүек күреп, унда йөрөргә, эшләргә өйрәнеп бөткән эшселәр* М. Ғафури. *Күлдәге үҫемлек донъяһы ике бүлкәт булып урынлашҡан.* Д. Бураҡаев. / Бер йүнәлеште тәшкил иткән, махсус бер тематиканы эсенә алған нәмәләр йыйылмаһы. *Китап-*

*тар донъяһы. Балалар донъяһы.* ■ *Бына кайҙа ул экиәттәр донъяһы. Шул кәҙәр матур һәм йыйнак итеп йыйыштырылган зал. Зал тулы кыҙҙар һәм егеттәр.* С. Агиш.

**5.** Билдәле булған бер ижтимағи королош, культура һәм социаль-тарихи билдәләр меиән берләшкән кешелек йәмғиәте. *Социализм донъяһы. Капитализм донъяһы. Иҫке донъя. Яңы донъя. Емерегеҙ ләгнәт капитал донъяһын, бер канһын ус.* Д. Юлтый. / Айырым эшмәкәрлек өлкәһе һәм шул өлкәләге кешеләр төркөмө. *Актёрҙар донъяһы. Сәнгәт донъяһы. Белем донъяһы. Әҙәбиәт донъяһы. Фән донъяһы.* ■ *Очерк беҙҙең башкорт әҙәбиәтендә үҙе бер донъя.* Ғ. Хөсәйенов. *Шатлык беҙҙең иң ҙур кунак булды, беҙ мактанык шигыр донъяһын.* М. Хәй.

**6.** Кеше тәбиғәтенең эске йөкмәткеһен, рухи булмышын, уның төрлө уй, кисереш, хис-тойғо һ. б. һымак психик яғын тәшкил иткән өлкә. *Эске донъяһы бай кеше.* ■ *Кеше үҙенең тәбигәте менән бик катмарлы, уның тышкы күренешенән тыш эске донъяһы бар, кешене аңлар өсөн иң элек уның йөрәген аңлай белергә кәрәк.* М. Тажи. *Ауылдың бай тәбигәте, киң иркен кырҙары, тарихи вакигаларга бай тормошо Әсмәнең эске донъяһын үҫтерергә, байыктырырга ярҙам итә.* З. Биишева. *[Ричард:] Китмә, Айгөл. Һиңә нимә калган ул сит донъяла? [Айгөл:] Унда минең әсәйем буласак. Әсәй кеше үҙе бөтөн бер донъя ул.* М. Кәрим. .. *Ахыры, һин бөтә донъям, донъяһыҙ мин нишләйем!?* Н. Хәбиров.

**7.** *күсм.* Кешенең йәшәү осорон эсенә алған тормош. *Донъя рәхәте. Донъя кәрәге. Донъя буталыу.* ■ *Донъяла хәҙер уның [Зөлхизә өсөн бер генә шатлык бар. Ул — Аҙнагол.* З. Биишева. *Аҙак, донъялар бер аҙ юлга һалынгас, барып, дуҫты күреп кайтырмын тигәйнем де Акбулаттан хат өҙөлдө.* З. Биишева. **Донъя мәшәкәттәре** тормош көткәндә була торған хужалыктағы вак-төйәк эш, хәстәр. .. *Өфөләге улым .. күпме кунакка сакырҙы, донъя мәшәкәтенән йырыныи сыгып китеп булманы.* Р. Низамов. **Донъя күргән** тормошта төрлө хәлдәрҙе күп күреп, күп белгән, тормош тәжрибәһе күп булған кешегә карата әйтелә. *Донъя күргән кеше.* ■ *Донъя күргән ирҙәр, олатайҙар: ир канаты,— тиҙәр,— ат була.* К. Даян. *Ирҙәр араһында донъя күргәнерәктәре, япон һугышында йөрөп кайткандары уйҙы тагы ла тәрәнерәктән йөрөтәләр.* Һ. Дәүләтшина. **Донъяның әсеһен-сөсөһөн күп күргән** йәшәү дәүерендә төрлө тормош ауырлыктарына осраған, төрлө тормош хәлдәрен күп белгән, күргән. *Йәштән тол калып, етем балалар үҫтереп, ул [Шәһиҙә] донъяның әсе-сөсөһөн Муйылга караганда күп күргән.* Һ. Дәүләтшина.

**8.** *күсм.* Кеше йәшәү өсөн кәрәк булған йорт-каралдылар, көнкүреш, хужалык нәмәләре, мал, мөлкәт, байлык һ. б. *Донъяһы шәп. Донъяһы төҙөк. Донъяһы ялт итеп тора. Донъя йыйыу.* ■ *Халыктың бөтә хужалыгы емерелде. .. Фронтарҙа йөрөп донъяһы туҙган кешеләр өсөн көн күреү бик ауыр ине.* Д. Юлтый. *.. Һинең, [катын], .. донъяңды мөкиббән онота торган гәҙәтең бар. Донъя һинең кулыңда калган, күҙ-колак бул!* С. Кулибай. *Карт менән карсык үлгәс, уландары донъя бүлә башлайҙар* (Әкиәттән). *Донъя һарайынан үҙе киткәс, нисек икән ирҙең донъяһы* (Халык йырынан). **Донъя бөтәйтеү** хужалыкты төҙәтеү, аякка баҫтырыу.

**9.** *күсм. һөйл.* Ниҙеңдер бик күплеге, иҫәпһеҙ күп микдары. *Магазинда кейем-һалым донъя.* ■ *Һылыуҙарҙан һылыу кыҙҙар донъя.* М. Илбаев.

**10.** (*йәки* **был донъя, фани донъя, якты донъя**) *дини* Иҫке хөрәфәт буйынса, ер өҫтөндәге тормош; теге донъя; *киреһе* эхирәт. *[Хәжәр:] Был донъяла кәҙеремде белмәне [ирем], хак донъяла аллаһы тәгәлә күрһәткән изгелектәремде еткерер үҙенә.* Ш. Янбаев. *[Йәннәтбикә — Фәриҙәгә:] — Һы, донъя эше тип тамам шашканһың. .. Ысын донъя әхирәттә тигән күрьән.* Ф. Иҫәнғолов. *Теләккәйең камил ай булмагас, был донъя кайҙарга тыцма икән* (Халык йырынан).

◆ **Донъя баҫыу** ғәҙәти тормош көтөү мәшәкәттәре менән нык мәшғүл булып, дәрт һүнеү, күңел төшөү, бирешеп китеү. *Үҙгәргәнһең, иҫке шуклыгың юк, донъя баҫа, тиһең, ирҙәрҙе.* М. Кәрим. **Донъя боток** *кар.* **донъя тулы. Донъяға килеү** тыуыу.— *Хәҙер бер бала донъяга килгәнен ишетеп калһалар, духтыры ла, фельдшеры ла сумкаларын аҫып килеп етәләр.* М. Тажи. **Донъяға сығыу** 1) ғәмәлгә килеү, барлыкка килеү; 2) баҫылып сығыу (китапка карата). *Аҙыусының ике китабы донъяга сыкты.* **Донъя йөгөн тартыу** тормош көтөү, йәшәүҙең иң яуыр яғын үҙ өҫтөнә алыу. *Заманаһы шундай ине: бәлиг булмаган малайҙар менән алма кеүек кыҙҙар тартты донъя йөгөн.* Т. Килмөхәмәтов. **Донъя көтөү** тормош короп йәшәү. **Донъя күреү** ил, ер күреп йөрөү. *Тайфур [буровойга] яңы килгән. Курше колхоздыкы. Председатель рөхсәте буйынса, донъя күреп кайтыу өсөн килгән ул.* К. Мәргән. **Донъя короткос** иммәнелер боҙоп, юк итеп йөрөгән кешене эрләгәндә әйтелә. **Донъя короу** тормош кәрәк-яраktары булдырыу, тормошто юлға һалыу. *Донъя короп йәшәй башлау.* ■ *[Әбей:] донъягыҙҙы короп ебәрер өсөн мин һеҙгә бүләк итеп әҙерәк мал бирәм* (Әкиәттән). **Донъя куйыу** вафат булыу, үлеү. *..Үпкә ауырыу менән ыҙа сигә торгас, уның [Саулютеның] ире Юныс донъя куйган.* К. Ибәтуллин. **Донъя куптарыу** нык шау-шыу тыуҙырыу, көслө шаулау. *Гөлйөҙөм бер калак югалган өсөн дә донъя куптарып эрләй торган Ғәзимәгә караганда ла Миңлекәйҙән шикләнә.* Һ. Дәүләтшина. **Донъя кыйратыу** *мыҫк.* нимәлер эшләп ташлау, бик шәп эшләү, һәйбәт итеп куйыу. *[Сәлих — Йәнтимергә:] .. Йәнәһе, һин генә эшлекле кеше лә, һин генә донъя кыйратаһың!* С. Агиш. **Донъя кырыу** *шул ук* **донъя кыйратыу.** *[Ярлыманов:] Азаматов ул донъяны кырмаксы була. Ә донъя тиҙ генә кырылмай. .. Һин башыңды ташка бәрһәң дә ул үҙенекен итә.* Ә. Вәли. **Донъя кыуыу** нык бирелеп донъя көтөү, мал табырға, байығырға тырышыу.— *Донъя кыуыу Йомаголга килешһен! Ни тиклем байлыгы бар, ни тигән донъяһы бар, шунда ла туймай, донъя артынан саба ла саба.*

Ғ. Дәүләтшин. **Донъя малы** байлыҡ. *Ата-бабаларҙан мираҫ булып донъя малы тороп ҡалмаған.* Ш. Биҡҡол. *Фани донъя малдарының файҙаһы юҡ дан киткәс* (Халыҡ йырынан). **Донъя малы — дуңғыҙ ҡаны** байлыҡ, малға иҫең китмәһен, кеше үлгәс, бөтә нәмә лә тороп ҡала тигән мәғәнәлә әйтелә. *[Яппар:] Мал туҙҙырырғамы, ә? [Мулла:] Донъя малы — дуңғыҙ ҡаны, үлһәң, барыбер яттарға ҡала. [Яппар:] Уныһы шулай ҙа бит, .. мал йәлке...* Б. Бикбай. **Донъянан биҙеү** (*йәки* **туйыу, ялҡыу**) йәшәүҙән биҙеү, йәшәгә килмәй башлау. **Донъянан кисеү** (*йәки* **үтеү, күсеү, ҡайтыу, китеү, айырылыу**) үлеү. *Әсәйең һине тыуҙырғандың һуңында донъянан кисте, хоҙа урынын ожмахта ҡылһын, амин .. (тип уҡыны Шәмси).* Ғ. Хәйри. *Беҙҙең Айбулат мәрхүм .. шәһит үлеме менән донъянан китте.* Һ. Дәүләтшина. *Шәғәли би донъянан үтте, Чәсәлкә ата янына дәфен ҡылдылар.* «Башҡорт шәжәрәләре», 1960. **Донъяныҡын донъялыҡта ҡайтарыу** *йәки* **донъялағы иҫәп донъяла, донъяныҡы донъяла** кешенең эшләгән яҡшылыҡтары һәм яманлыҡтары, һәр ҡылығы өсөн иҫән-һау саҡта иҫәпләшергә кәрәк, тигән мәғәнәлә ҡулланыла. *[Әткол:] Был изгелегегеҙҙе әхирәткә ҡалдырмам, донъялыҡта ҡайтарырмын. Тиҙ көндән бөтә ғалим-ғөләмәләрҙе йыйып ҙур әҙерлек менән һыйлаясаҡмын.* Т. Хәйбуллин. *[Көтөүсе] күҙ еткәс, эш хаҡын алырға тип байға килә. Бик яҡшы, ҡустым,— ти бай,— донъялағы иҫәп донъялыҡта ҡайтһын. Бына һиңә һөйләшеү буйынса ике һөйәк ит* (Экиәттән). **Донъяның артына тибеп йәшәү** бер ниндәй ауырлыҡ, етешһеҙлекте белмәй, иркен, мул тормошта уйһыҙ, ғәмһеҙ йәшәү. *[Мөдир:] Үҙемдең Яңыбай ҡорҙашты әйтәм. Вәт йәшәй дек йәшәй кеше! Көн дә ҡунаҡ, көн дә һый. Өйҙәренә инһәң боролоп сыҡмалы түгел. .. Донъяның артына тибеп йәшәй улар.* Ә. Байрамов. **Донъя тотҡаһы** тормош көтөүҙә, йәшәүҙә төп көс, терәк. *[Ярлыҡапов] үҙ-үҙен был донъяның бер тотҡаһы, алыштырғыһыҙ бер етәксе тип иҫәпләй.* Ғ. Әхмәтшин. **Донъя тулы** бик күп. *Донъя тулы булыу.* ■ *Баймаҡ ҡайһылай байып киткән дә! Ҡайһы ғына лафҡаһына инмә, донъя тулы нәмә.* Һ. Дәүләтшина. **Донъяһын онотоу** бер нәмә тураһында уйламай, ниндәйҙер бер эшкә һ. б. ныҡ мөкиббән бирелеү. *Донъяһын онотоп ултыра.* ■ *Заһит мөкиббән китеп китапҡа төбәлгән дә донъяһын онотҡан. Ҡутәрелеп тә ҡарамай.* Ф. Әсәнов. **Донъяһы теүәл** (*йәки* **теүәлләнеү**) күңеле ҡәнәғәт, нимә менәндер риза булыу. *[Ҡарасәс:] Ай-һай! Донъяң теүәлләнгән икән, ҡыҙҙы үҙеңә ҡараҡкас.* Х. Ғәбитов. **Ике донъя — бер мөрйә** *йәки* **ике донъя — бер һеү алла** иҫе китмәгән, ғәмһеҙ кешегә ҡарата әйтелә. *Рахмайға ни ике донъя — бер мөрйә, Рахмай шулай гәмһеҙ генә көн итә.* К. Кинйәбулатова. **Теге донъя** *дини* Ислам дине буйынса, үлгәндән һуң йәшәй торған урын; әхирәт; *киреһе* фани донъя, яҡты донъя, был донъя. *[Тимеркәй:] Ошо донъяны алла яратҡан, тиҙәр. Әле уның был ғына түгел, теге донъяһы — әхирәте бар, тиҙәр.* Д. Юлтый. **Теге донъяға китеү** үлеү. *Әйе, теге донъяға китмәҫ өсөн нисек кенә тешең-тырнағың менән йәбешеп ҡарышма, бер нәмә лә сыҡмаясаҡ. Йәшәүҙең законы шундай,— тип уйланды Әхмәҙуллин ҡарт.* Д. Исламов.

● *Донъя баҫһа, тоҙ ҙа татлыға әйләнә.* Әйтем. *Донъя бер алдын, бер артын күрһәтә.* Әйтем. *Донъя киңлегенән ни файҙа бар, аяҡ кейемдәрең тар булғас.* Әйтем. *Донъя ҡораманан йыйыла.* Әйтем. *Донъя ҡуласа, әйләндереп бер баҫа.* Әйтем. *Донъя малы — дуңғыҙ ҡаны.* Әйтем.

**ДОНЪЯЛЫ** *с.* Йорто, хужалығы булған; ғаиләле. *Донъялы кеше.*

**ДОНЪЯЛЫҠ** *и.* Донъялағы тормош; йәмғиәт тормошо. *Йәннәте лә, тамуғы ла бары донъялыҡта ғына.* Р. Бикбаев. *Әхирәткә түгел, донъялыҡка бик ҙур, уртаҡ бәхет эҙләп яна йөрәгем.* Б. Вәлит.

**ДОНЪЯСЫЛ** *с.* Тормош көтөүгә ихлас, хәстәрлекле.— *Айбулат улай һин уйлағанса шыпа ҡоро ҡул ҡайтмаған. Ул донъясыл, бөтмөр егет.* Һ. Дәүләтшина.

**ДОНЪЯУИ** [*ғәр.*] *с.* Дингә, дини ҡараштарға мөнәсәбәте булмаған, ысын тормоштағы, реаль күренеш һәм хәлдәргә бәйле, донъяға (7 мәғ.) мөнәсәбәтле; донъя менән бәйләнешле. *Донъяуи талап. Донъяуи теләк. Донъяуи уй. Донъяуи эштәр.* / Ябай тормош менән бәйле, ысын тормош талаптарына яраҡлы, дингә бәйләнешле түгел; *киреһе* дини. *Донъяуи мәктәп.* ■ *[Мәҙрәсәлә] дин һабағы менән бергә аҙ-маҙ донъяуи һабаҡтар уҡытыла башланы.* Ф. Иҫәнғолов. *«Мөхәммәдиә» мәҙрәсәһендә дини белем менән бергә донъяуи ғилемдәр ҙә өйрәтелә.* Ә. Харисов.

**ДОҢ** *окш.* Яңғырауыҡлы ҡаты нәмәгә һуҡҡанда сыҡҡан тауышты белдергән һүҙ. *Доң итеү.*

**ДОҢҒОЛДАҠ** *и. кар.* **дуңғырлаҡ.** .. *Ҡола бейәнең доңғолдағы шылтыраһа ғына эсемә йән кереп китә.* Ф. Иҫәнғолов.

**ДОҢҒОЛДАУ** *к.* Доң-доң итеү. *Ҡыңғырау доңғолдай.*

**ДОҢҒОР** *окш.* Эсе ҡыуыш нәмәгә бик ҡаты булмаған нәмә һуғылғанда сыҡҡан тауышты белдергән һүҙ. *Доңғор итеү.*

**ДОҢҒОР-ДАҢҒЫР** *окш. кар.* **даңғыр-доңғор.**

**ДОҢҒОР-ДОҢҒОР** *окш.* Ҡабат-ҡабат доңғор иткән тауышты белдергән һүҙ. *Доңғор-доңғор итеү.* ■ *Буш биҙрә ҡотоҡтоң йылтыр боҙ ҡаплаған бураһына доңғор-доңғор һуғылып түбән төшә.* Ш. Янбаев.

**ДОҢҒОРҘАҠ** *и. кар.* **дуңғырлаҡ.** *Алдан башлап йөрөй торған ат муйынына доңғорҙаҡ тағып ебәрҙеләр.* Ғ. Хөсәйенов.

**ДОҢҒОРҘАТЫУ** *к. кар.* **доңғорлатыу.**

**ДОҢҒОРЛАҠ** *и. кар.* **дуңғырлаҡ.**

**ДОҢҒОРЛАТЫУ** *к.* Доңғор-доңғор иттереү, доңғор-доңғор килтереү. *Мискәһен доңғорлатып, ишек алдына пожар аты менән Әшрәф ҡарт килеп инде.* Р. Солтангәрәев.

**ДОҢҒОРЛАУ** *к.* Доңғор-доңғор итеү, доңғор-доңғор килеү. *Йәшникле арба доңғорлап эргәбеҙҙән үтеп китте.* Д. Бүләков. *Яҡында ғына доңғорлап киткән сиркәү ҡыңғырауҙары ишетелде.* З. Биишева.

**ДОҢ-ДОҢ** *окш.* Ҡабат-ҡабат доң иткән тауышты белдергән һүҙ. *Доң-доң итеү.* ■ *Ҡуҡкә ҡалтайған баҡыр ҡояш йәбешкән. Шул баҡыр*

*түңәрәккә кемдер, ахырыһы, таш менән бәрә: доң-доң.* М. Кәрим.

**ДОҢҠ** *окш.* Ҡаты нәмәләр бер-береһенә ҡапыл бәрелгәндә доңғолдап сыҡҡан тауышты белдергән һүҙ. *Доңҡ итеп ҡалыу.*

**ДОҢҠ-ДОҢҠ** *окш.* Ҡабат-ҡабат доңҡ иткән тауышты белдергән һүҙ. *Доңҡ-доңҡ бәрелеү. Доңҡ-доңҡ һуғыу. Доңҡ-доңҡ килеү.*

**ДОҢҠОЛДАТЫУ** *к.* Доңҡ-доңҡ иттереү, доңҡ-доңҡ килтереү. *Доңҡолдатып һуғыу.*

**ДОҢҠОЛДАУ** *к.* Доңҡ-доңҡ итеү, доңҡ-доңҡ килеү. *Доңҡолдап, ялҡынлап, һыҙғырып килә ҙур машина — трактор!* Ғ. Амантай.

**ДОҢҠОТОУ** *к.* *һөйл.* Нык итеп һуғыу; төндороу. *Башҡа доңҡотоу.*

**ДОҢҠОУ** *к.* *һөйл.* Йөҙтүбән ҡолау.

**ДОПРИЗЫ́ВНИК** [*рус.*] *и.* Хеҙмәткә алырға иҫәпкә ҡуйылған, башланғыс хәрби өйрәнеү үткән үҫмер егет. *Допризывник булып йөрөү.*

**ДОПРО́С** [*рус.*] *и.* *һөйл.* Ғәйепләнеүсенән йәки шаһит кешенән берәй эш, енәйәт һ. б. тураһында алынған һорау; һорау алыу. *Допрос алыу. Допросҡа саҡырыу.* ■ *Большевиктан допрос алыуға ҡарағанда таштан май һығыу анһатыраҡ икәнен следователь яҡшы белә ине.* Х. Мохтар.

**ДОРОП** [*рус.* дробь] *и.* Һунар мылтығынан атыуға тәғәйенләнгән бәләкәй генә йомро-йомро ҡурғаш. *Вак дороп. Эре дороп. Дороп һалып атыу. Дороп менән яһау.*

**ДОРФА** *с.* *диал.* Тупаҫ. *Дорфа кеше.*

**ДОСТО́ИН** [*рус.* достойный] *с.* *һөйл.* **1.** Торош итерлек; торошло, лайыҡ. *Маҡтауға достоин.// Достоин ҡаршылау.*

**2.** Хөрмәт итерлек; хөрмәтле. *Достоин кеше. Достоин булыу.*

**3.** Кәүҙәгә ҙур, ныҡ, көслө. *Достоин ир.* ■ *Сәрби еңгәм генә бер аҙ ашарға тапҡан була. Өс достоин кешегә уның тапҡаны ғына етмәй.* Д. Юлтый.

**ДОТ** [*рус.*] *и.* Оҙаҡ ваҡыт оборона тотоу һәм миномёт, пулемёт һ. б. атыу өсөн (таш, бетон, тимерле бетондан нығытып) эшләнгән ҡоролма. *Дот төҙөү.* ■ *Ҡала өс меңгә яҡын дот һәм дзоттар менән уратып алынған. Танкылар һәм пехота үтә алмаҫлыҡ.* Ә. Ихсан. *Беҙ оборона тотабыҙ. Һалдаттар.. траншеяларға, дзот һәм доттарға инеп боҫҡан.* «Ағиҙел», 1969, № 9.

**ДОТА́ЦИЯ** [*рус.* ⟨ *лат.*] *и.* Хужалыҡ ойошмаларына, предприятие, учреждениеға һ. б. артыҡ сығымды ҡаплау һәм башҡа кәрәккә тотоноу өсөн хөкүмәттән бирелгән ярҙам. *Дотация алыу. Дотация биреү. Дотация һорау.*

**ДОХА́** [*рус.*] *и.* *кар.* **даха 1.**

**ДОХО́Д** [*рус.*] *и.* *һөйл.* Ниндәйҙер предприятие һ. б. ойошманың берәй төрлө эшмәкәрлектән хөкүмәт, ойошма йәки айырым кеше тарафынан алынған материаль байлыҡ йәки аҡса; килем, төшөм. *Дәүләт доходы. Милли доход. Йыллыҡ доход. Саф доход. Доход бүлеү.* ■ *Социалистик ярыш, ҡаршылау планы, доходты хеҙмәткә ҡарап бүлеү.. Бөтөнләй эш башҡаса китте колхозда.* Б. Бикбай. *Граждандарҙың шәхси милкендә йәки файҙаланыуында булған мөлкәт эшләмәйенсә доход алыу өсөн хеҙмәт итергә, йәмғиәт мәнфәғәттәренә зыян килтереп файҙаланылырға тейеш түгел.* Башҡорт АССР-ының Конституцияһы, 1984.

**ДОХОДЛЫ** *с.* Доход бирә торған, доходты күп биргән; килемле, төшөмлө. *Доходлы хужалыҡ.*

**ДОЦЕ́НТ** [*рус.* ⟨ *лат.*] *и.* Юғары уҡыу йорттарындағы уҡытыусыларға бирелә торған, профессорҙан түбән, ассистенттан юғары ғилми дәрәжә һәм вазифа, шулай уҡ шул дәрәжәне алған, шул вазифалағы кеше. *Доцент булыу.*

**ДОШМАН** [*фарс.*] *и.* **1.** Үслек, хаслыҡ тотҡан, насар мөнәсәбәттә булған кеше. *Дошман булыу.* ■ *Күршеләрҙең булһын,.. һағалап ҡына торалар, берәүһе лә беҙҙе күрә алмай, бөтәһе дошман.* Т. Хәйбуллин. *Дошман оҫта, һине алдай белә, хәйлә белә, мәлен һайлай белә кәрәк сағында.* Т. Йәнәби. **Дошман күреү** дошман тип иҫәпләү. *..Бысраҡтарын [насар кешеләрҙең] илгә фаш иткәнгә барыһы мине дошман күрҙеләр.* Ғ. Мәсғүт. **Дошман эше** (*йәки* **һүҙе**) насар хистәр менән һуғарылған, яуызлыҡ эшләүгә ҡоролған эш йәки һүҙ./Принципиаль ҡаршылыҡта тороусы. *Дошманы булдым гүмерлек алланың.* Ш. Бабич. **Ҡан дошман** ҡан менән үс ала торған дошман. **Хас дошман** бик ҡаты үсле дошман.

**2.** Һуғышта ҡапма-ҡаршы торған яҡ. *Дошман ғәскәре. Дошман позицияһы. Дошман пуляһы. Дошманды еңеү.* ■ *Күпер ауыҙы асыҡ. Дошман окобы күренә. Атып ҡуйыуҙары ла ихтимал.* Д. Юлтый. *Кусимов батыр улы, һөйгән улы башҡорт халҡының ҡара юрға ҡара йәшен булып ябырылды дошман өҫтөнә.* Р. Ниғмәти.

**3.** Ижтимағи ҡарашы һәм синфи булмышы менән ҡапма-ҡаршы кеше. *Синфи дошман. Халыҡ дошманы.* ■ *Большевиктар әйтә: «Был донъяла ярлы эшселәрҙең хас дошманы буржуйҙарҙың тамыры ҡороһон»,— тип.* Ш. Бабич.

**4.** *күсм.* Зыянлы, зарар килтергән нәмә.

**5.** *с.* *мәғ.* Дошманлыҡ хисе һаҡлаған. *Дошман кеше. Дошман яҡ.* ■ *Атайым Ғаяз байҙың үҙенә генә түгел, уның бөтә ағай-энеһенә дошман кеше.* Д. Юлтый. *Дошман халыҡ әйтә: — Ленин үлде, юҡ, үлмәне Ленин! Һаман йәшәр, киҫелһә лә миллион гүмерҙәр ...* Х. Ҡунаҡбай.

◆ **Дуҫыңа түгел дошманыңа күрһәтмәһен** бик ауыр хәлгә ҡарата әйтелә.

● *Асыу — дошман, аҡыл — дуҫ, асыуыңа аҡыл ҡуш.* Мәҡәл. *Алтын таш булмаҫ, дошман яуҙа, иш булмаҫ.* Мәҡәл. *Ауыҙың тулы ҡан булһа ла дошманың алдында төкөрмә.* Мәҡәл. *Дошмандан илең һаҡла, ярамһаҡтан серең һаҡла.* Әйтем. *Дуҫ илатып өйрәтер, дошман көлдөрөп көйрәтер.* Әйтем. *Дуҫ менән дуҫ булғанға шатлан, дошман менән дуҫ булыуҙан һаҡлан.* Әйтем.

**ДОШМАНЛАШТЫРЫУ** *к.* Бер-береһенә махсус рәүештә ҡаршы ҡуйып, дошманға (1 мәғ.) әйләндереү. *Иптәштәрҙе дошманлаштырыу. Дуҫтарҙы дошманлаштырыу.*

**ДОШМАНЛАШЫУ** *к.* Үҙ-ара дошманға әйләнеү, дошман булыу. *Дошманлашып бөтөү. Дошманлашып йәшәү. Үсләшеп дошманлашыу.*

■ *Ирҙәр, шаулашмағыҙ, юк-барҙан ғына дошманлашмағыҙ.* М. Кәрим.

**ДОШМАНЛЫҠ** *и.* Берәүҙе күрә алмауға, нык яратмауға нигеҙләнгән мөнәсәбәт. *Милли дошманлыҡ. Синфи дошманлыҡ. Дошманлыҡ һаклау. Дошманлыҡ ҡылыу.* ■ *Аҫабалыҡ өсөн булған был ыҙғыш тора-бара асыҡ дошманлыҡҡа килтергән.* Б. Бикбай.

**ДӨБӨР** [1] *и. диал.* Төбөр. *Агас дөбөрө.*

**ДӨБӨР** [2] *окш.* Һуғылып-бәрелеп сыҡҡан тонок тауышты белдергән һүҙ. *Дөбөр итеү.* ■ *Бер вакыт .. баш өҫтөндә генә дөбөр итеп калды. Августа ла күк күкрәр икән.* К. Кинйәбулатова.

**ДӨБӨР-ДАБЫР** *окш.* Төрлөсә дөбөр иткән тауышты белдергән һүҙ. *Акъял батыр дөбөр--дабыр ер аҫтына төшөп китеп, шунда тороп калган.* «Акъял батыр».

**ДӨБӨР-ДӨБӨР** *окш.* Ҡабат-ҡабат дөбөр иткән тауышты белдергән һүҙ. *Дөбөр-дөбөр итеү. Дөбөр-дөбөр килеү.* ■ *Дөбөр-дөбөр, дөбөр-дөбөр, иҙәндәре дөбөрләй* (Халыҡ йырынан).

**ДӨБӨРЛӘТЕҮ** *к.* **1.** Дөбөр-дөбөр иттереү./ Ҡаты итеп ишек ҡағыу. *Ишек дөбөрләтеү.* ■ *Бер вакыт кемдер бик каты итеп ишек дөбөрләткән* (Әкиәттән).

**2.** *күсм.* Бик яҡшы итеү; шаулатыу, гөрләтеү. *Дөбөрләтеп донъя көтөү.* ■ *Шәгәли улына кәләш әйттерә һалып, дөбөрләтеп туй яһап ташлай.* Б. Бикбай.

**ДӨБӨРЛӘҮ** *к.* Дөбөр-дөбөр итеү, дөбөр-дөбөр килеү. *Ҡотора ел, тышта буран .. берсә тау-таш ишелгәндәй дөбөрләп китә.* К. Кинйәбулатова.

**ДӨБӨРЛӘШЕҮ** *к. урт. кар.* **дөбөрләү.** *Ауылга беренсе булып 60-сы гвардия кавалерия полкының .. воиндары аттарҙа дөбөрләшеп килеп инде.* Ә. Ихсан. *Тимер күперҙән дөбөрләшеп поездар үтеп тора.* М. Тажи.

**ДӨБӨР-ШАТЫР** *окш.* Көслө дөбөрләгән, шатырлаған төрлө тауыштарҙы белдергән һүҙ. *Дөбөр-шатыр итеү. Дөбөр-шатыр килеү. Дөбөр--шатыр йөрөү.* / *күсм.* Ҡыҙыу, етеҙ эш-хәрәкәтте белдергән һүҙ. *Дөбөр-шатыр килеп инеү.* ■ *Ирен өлтөрләп каршы алды Фатима, дөбөр--шатыр мунса ягып ташланы.* Б. Бикбай.

**ДӨГӨ** *и.* **1.** Йылы яҡтарҙа һуғарып үҫтерелә торған, ҡыяҡлылар ғаиләһенә ҡараған башаҡлы, аҡ оҙонсараҡ орлоҡло үҫемлек. *Дөгө сәсеү. Дөгө үҫтереү.*

**2.** Шул үҫемлектең ашлыҡ өсөн алынған оҙонсараҡ аҡ орлоғо. *Дөгө бутҡаһы. Дөгө бәлеше. Дөгө ярмаһы.*

**ДӨЙӨМ** *с.* **1.** Күп халыҡты ылыҡтырған, һәр кемгә ҡараған, күп халыҡҡа мөнәсәбәтле; күмәк. *Дөйөм мобилизация.*

**2.** Күп халыҡ тарафынан башҡарылған, күмәкләп бергә үтәлгән; күмәк. *Дөйөм шау-шыу.*

**3.** Күп кешегә ҡараған; уртаҡ, күмәк. *Дөйөм ер. Дөйөм хужалыҡ.* ■ *Тора-бара авторы онотолоп, ул әҫәр дөйөм халыктыкы булып китә.* Ғ. Амантай. / Күп кешене йәки нәмәне эсенә алған; уртаҡ. *Газетабыҙҙың дүртенсе битендә .. дөйөм баш менән ваҡ хәбәрҙәр бирелгән.* «Совет Башҡортостаны», 1964, 30 апрель.

**4.** Күп кешегә, халыҡҡа хас; уртаҡ. *Дөйөм күренеш.. Дөйөм үҫеш.*

◆ **Дөйөм алғанда** *инш.* йомғаҡлап, төп бер фекергә килгәндә аңлата. *Дөйөм алганда, эш насар түгел.* **Дөйөм белем** махсус булмаған белем. *Дөйөм белем биреү мәктәбе.* **Дөйөм йыйылыш** бер коллектив, предприятие, ойошманың бөтә ағзалары өсөн булған йыйылыш. *Йыйында ла, дөйөм йыйылышта ла, халыҡ йыйылган һәр бер ерҙә лә Ғимай аты һәр сак макталган, мактау һүҙе яуган ерәнгә.* Х. Ҡунаҡбай. **Дөйөм ятаҡ** (*йәки* **торлаҡ**) бер коллектив, предприятие, ойошмала эшләүселәр йәки уҡыусылар бергә йәшәй торған йорт. *Егеттәр үҙҙәренең мал һарайы кеүек ҙур дөйөм ятактарына кайтты.* Һ. Дәүләтшина. *Төҙөүселәрҙең дөйөм торлагы тынып калды.* Н. Асанбаев.

**ДӨЙӨМЛӨК** *и.* Дөйөм хәл, уртаҡ булған нәмә, уртаҡлыҡ.

**ДӨЙӨМЛӨЛӨК** *и. кар.* **дөйөмлөк.** *Был [яңы] йырҙарҙа уртаклыҡ, дөйөмлөлөк бик ҙур. Ләкин үҙенсәлек тә һиҙелә.* К. Мәргән.

**ДӨЙӨМЛӘШЕҮ** *к.* **1.** Дөйөм хәлгә килеү, уртаҡҡа әйләнеү. *Дөйөмләшкән хужалыҡ.*

**2.** Бер уртаҡ мәғәнәгә, һөҙөмтәгә килеү. *Дөйөмләшкән фекер.*

**ДӨЙӨМЛӘШТЕРЕЛЕҮ** *к. төш. кар.* **дөйөмләштереү.** *Дөйөмләштерелгән хужалыҡ. Дөйөмләштерелгән тәжрибә.*

**ДӨЙӨМЛӘШТЕРЕҮ** *к.* **1.** Дөйөмгә (3 мәғ.) әйләндереү, уртаҡ итеү. *Хужалыкты дөйөмләштереү.* ■ *Дөйөмләштерәбеҙ тип йыйып алган һыйырҙарыбыҙҙың быҙауҙарын ҡыралар.* Б. Бикбай.

**2.** Бергә йыйып, дөйөм; уртаҡ мәғәнә биреү, уртаҡ һығымта яһау. *Материалды дөйөмләштереү. Тәкдимдәрҙе дөйөмләштереү. Тәжрибәне дөйөмләштереү.* ■ *Мәкәләләр һәр ваҡыт .. тормош тәжрибәһен дөйөмләштереү нигеҙендә барлыккка килгән.* Ж. Кейекбаев.

**ДӨЙӘ** *и.* **1.** Бер йәки ике үркәсле, сүл, дала бушлыҡтарында йәшәгән, сыҙамлығы менән айырылып торған ҡуш тояҡлы эре көйөш малы. *Дөйә балаһы. Дөйә ите. Дөйә йөнө. Дөйә көтөүсеһе. Ҡуш үркәсле дөйә. Дөйә аҫрау.* ■ *Сәгиҙә артык түҙә алманы: — Бутаһынан айырылган буҙ дөйәләй булып, буҙлап ултырам инде бына.* Һ. Дәүләтшина. **Бура дөйә** ата дөйә. **Нар дөйә** бер үркәсле дөйә. **Эңгәк дөйә** *диал.* инә дөйә.

**2. дөйәләр, дөйә һымаҡтар** *зоол.* Ҡуш тояҡлы хайуандар ғаиләһенең йомшаҡ тояҡлылар төрө.

◆ **Дөйә аяғы** *бот.* оҙон һабаҡлы, томбойоҡ һымаҡ япраҡлы һыу үләне. **Дөйә бөжәк** *зоол.* ағас ҡороткостарының ҡортон ашай торған селтәр ҡанатлы бөжәк. **Дөйә ҡойроғо ергә еткәс** бик оҙаҡ ваҡыт үткәс үтәлеүҙе аңлата. **Дөйә муйыны** *этн.* 1) сигелгән бер биҙәк төрө; 2) дөйәнең муйын тиреһенән тегелгән һауыт. **Дөйә муйынынан кәкре** насар эш, ҡылыҡ тураһында әйтелә. **Дөйә тубылғыһы** *кар.* **тубылғы. Дөйә үҙенең кәкреһен белмәй** үҙенең етешһеҙлеген белмәгән, күрмәгән кеше тураһында әйтелә. **Дөйә һеңере** мал аҙығы итеп сәселә торған ваҡ теҙмә япраҡлы, шылтыраҡ орлоҡло үлән.

**Төймәләйҙе (йәки энәләй нәмәне) дөйәләй итеү** нимәнелер ныҡ арттырыу, ҡабартыу.

● *Буралანған дөйә бурбайыңдан ала.* Әйтем. *Дөйәләй буйың булғансы, төймәләй аҡылың булһын.* Әйтем. *Дөйә лә йомош, төймә лә йомош.* Әйтем.

**ДӨЙӘҒОШ** *и.* **1.** Осмай, шәп йүгерә торған оҙон аяҡлы, оҙон муйынлы, ҙур кәүҙәле, Африка бушлыҡтарында йәшәгән ҡош. *Һуҙып оҙон муйынын бына дөйәғош тора. Ҡойроҡ осталары аҡһыл, бөтә тәне сөм ҡара.* А. Игебаев.

**2. дөйәғош һымаҡтар** *зоол.* Африка һәм Көньяҡ Ғәрәбстан сүлдәрендә йәшәгән осмай торған иң эре яҫы күкрәкле ҡоштар төрө.

**ДӨЙӘТАБАН** *и. диал.* Бесәй табаны (*ҡар.* **бесәй**).

**ДӨЙӘСЕ** *и.* Дөйә ҡараусы, дөйә бағыусы. *Бөтә дөйә Муйынсаҡлы тауҙа булған, дөйәселәр бөтәһе лә сайҙа булған.* «Бабсаҡ менән Күсәк».

**ДӨКӘН** [*ғәр.*] *и. диал.* Магазин. *Һибәттең ауылдағы һәм баҙарҙағы дөкәнен яҙып мисәтләнеләр.* А. Таһиров.

**ДӨКӘНЕҮ** *ҡ. иҫк.* Тамамланыу, бөтөү. *Эш дөкәнде. Ҡеүәтем дөкәнде.* ■ *Байҙарҙың малы дөкәнде.* «Батыршаның хаты».

**ДӨЛ** *и. диал.* Бәрхәт.

**ДӨЛДӨЛ** [*ғәр.*] *и. миф.* Әкиәттәге ел кеүек елә, ҡош кеүек оса торған ат; толпар. *Ос, дөлдөлөм, ҡыҫҡарт ауыр юлым.* Д. Юлтый. *Күлдән эйәрле-йүгәнле бер дөлдөл сыға. Таҙ дөлдөлдө менеп ала* (Әкиәттән)./Дини хикәйәт буйынса, Ғәли Хәлиф менеп йөрөгән ат; толпар.

**ДӨМ 1.** *с.* Бик ҡуйы, ҡараңғы; шыр. *Дөм сауыл. Дөм урман.* ■ *Юрмый ғына буйы дөм ҡарағай, үтеп кенә булмай ҡарамай* (Халыҡ йырынан). *Ҡара ҡурғаштан тосораҡ, ҡараңғы төндән дөмөрәк, .. аяҡлы-ҡуллы ни булыр* (Әйтештән).

**2.** *р.* Бөтөнләй, тотошлай; шау, шыр. *Дөм ялған һүҙ. Дөм тиле.* ■ *Улар абайламаҫтан дөм икенсе урынға барып сыға.* Ф. Иҫәнғолов.

**3.** *ниҫ.* Сифаттың мәғәнәһен көсәйтә. *Дөм ҡара. Дөм һуҡыр.* ■ *Дөм ҡараңғы ҡурҡыныс төн.. Мәңге атмаҫ нурлы таң.* Д. Юлтый.

◆ **Дөм яуған ямғыр** бөтә ерҙе ҡаплап ҡараңғылатып, көслө итеп яуған ямғыр.

**ДӨМБӨР** [1] *и.* **1.** Балыҡты өркөтөп ҡыуа торған суҡмар башлы оҙон таяҡ; гөмбөр. *Дөмбөр менән балыҡ ҡыуыу.*

**2.** Иттең бот-аяҡ һөйәге; шаҡалай.

**3.** *диал.* Каса.

◆ **Дөмбөр[ө] батыу** көс-хәләтлек, тырышлыҡ, түҙемлек етеү; теш батыу. *Эшкә дөмбөрө батмай.* ■ *Әҙмәүерҙәй бер малай. Унынсыны бөттө лә, институтҡа дөмбөрө батманы.* С. Кулибай. **Дөмбөр башы** *диал.* тубыҡ ҡапҡасы.

● *Туй үткәс, дөмбөргә.* Әйтем.

**ДӨМБӨР** [2] *окш.* Ҡаты нәмә бушлыҡта ҡағылып-һуғылғанда сыҡҡан һаңғырау тауышты белдергән һүҙ. *Дөмбөр итеү.*

**ДӨМБӨР-ДӨМБӨР** *окш.* Ҡабат-ҡабат дөмбөр иткән тауышты белдергән һүҙ. *Яратмайым күрәгәнең дөмбөр-дөмбөр иткәнен. Яратам мин күрәгәнең мөлдөр-мөлдөр иткәнен* (Халыҡ йырынан).

**ДӨМБӨРЛӘТЕҮ** *ҡ.* Дөмбөр иткән тауыш сығарыу, дөмбөр иттереү. *Бәләбәйҙең берҙән-бер таш урамын дөмбөрләтеп баҙарға төштөк.* А. Таһиров.

**ДӨМБӨРЛӘҮ** *ҡ.* Дөмбөр-дөмбөр итеү, дөмбөр-дөмбөр килеү. *Бына йәшен дә ялтламай, күк арбалары алыҫта, әллә ҡайҙа дөмбөрләй.* К. Кинйәбулатова.

**ДӨМБӘЙ** *и.* **1.** Йылҡының бот тиреһенән тегелгән ҡымыҙ һауыты.

**2.** *күсм. мыҫҡ.* Бәләкәй буйлы, йыуантаҡ кеше.

**ДӨМБӘЙЕҮ** *ҡ. диал.* Һемәйеү.

**ДӨМБӘЙЛӘҮ** *ҡ. диал.* Дөмбәҫләү.

**ДӨМБӘҪЛӘНЕҮ** *ҡ. төш. ҡар.* **дөмбәҫләү** 1. *Дөмбәҫләнгән мейе ял һорай, хәл йыйырға кәрәк балаңа.* Ғ. Амантай.

**ДӨМБӘҪЛӘТЕҮ** *ҡ. йөкм. ҡар.* **дөмбәҫләү.**

**ДӨМБӘҪЛӘҮ** *ҡ.* **1.** Йоҙроҡ, суҡмар һымаҡ нәмә менән һуҡҡыслау, ныҡ бәргеләп туҡмау. *Ныҡ дөмбәҫләү. Дөмбәҫләп ташлау.* ■ *Ҡыҙып киткән боксерҙар һаман әле бер-береһен дөмбәҫләйҙәр ине.* Ә. Бикчәнтәев. *Таҙҙар ҡартты тотоп ала ла дөмбәҫләй башлай, ти* (Әкиәттән).

**2.** *күсм.* Туп атып ҡыйратыу, ныҡ туҡмау. *Артиллерия .. яр буйындағы окоптарҙы дөмбәҫләй башлай.* Ә. Ихсан. *Беҙ .. алһыҙ-ялһыҙ дошманды дөмбәҫләйбеҙ.* И. Ғиззәтуллин.

**ДӨМБӘҪЛӘШЕҮ** *ҡ. урт. ҡар.* **дөмбәҫләү.** *Хәсбикамал менән Васбикамал .. сәс тартыша, семтешә, дөмбәҫләшәләр.* Ш. Бикҡол.

**ДӨМӨГӨҮ** (дөмөк*ә*) *ҡ. тупаҫ* Үлеү, юҡҡа сығыу. *Дөмөктө лә дошман үҙ өңөндә, әммә еңеү төштө ҡиммәтҡә* (Бәйеттән).

◆ **Дөмөккөр (йәки дөмөк, дөмөккән, дөмөкһөн)** әрләгәндә, ҡарғағанда әйтелә. *Яндырырға теләп килеүең өсөн янып дөмөк, әйҙә, һин, пират! Бәҙруш Моҡамай [ҡараҡ бесәй] туп-тура баҡса буйлап сапты, дөмөккөр!* Й. Гәрәй.

**ДӨМӨКТӨРӨЛӨҮ** *ҡ. төш. ҡар.* **дөмөктөрөү.**

**ДӨМӨКТӨРӨҮ** *ҡ.* Үлтереү, юҡ итеү, бөтөрөү. *Снайперҙар бөгөн дә бер нисә фашисты дөмөктөргән.* С. Әлибаев.

**ДӨМӨРӘЙЕҮ** *ҡ. диал. ҡар.* **ҡараңғыланыу 1.**

**ДӨМП** *окш.* Ҡаты нәмәгә тупаҫ нәмә менән һуҡҡанда сыҡҡан тоноҡ тауышты белдергән һүҙ. *Дөмп итеү.*

**ДӨМПӨЛДӘТЕҮ** *ҡ.* Дөмп иттереү, дөмп итеп һуғыу, ҡағыу. *Дөмпөлдәтеп һөйөү. Дөмпөлдәтеп һуғыу.*

**ДӨМПӨЛДӘҮ** *ҡ.* Дөмп итеү. *Дөмпөлдәп тороу. Дөмпөлдөгө сығыу.*

**ДӨМРӘНЛӘҮ** *ҡ.* Кәүҙәне ныҡ тота алмай алға эйеп, йомолоп аҫҡа ҡарап хәрәкәт итеү (күберәк оло кешеләргә ҡарата әйтелә). *Дөмрәнләп йүгереү.* ■ *Гәрәй айыу һымаҡ дөмрәнләп өйгә табан атланы.* Б. Бикбай. *[Алпамыша] дөмрәнләп ҡасып барған Ҡолтабанды тотоп алып, ас биленән култығына ҡыҫа.* «Алпамыша».

**ДӘМҺӘ** *и. диал.* Төпһә.

**ДӨМҺӘРЕҮ** *ҡ.* Ҡараңғыланыу, ҡомһарыу (йөҙгә ҡарата). *Сарышев, төҫө-башы дөмһәреп, Сынтимергә һалҡын ҡарашын һирпте.* Ш. Янбаев.

**ДӨМӘЙЕҮ** *к.* Түңгәк һымаҡ булып ҡалҡып ятыу. *Нәсимә ни ҡабаланып килеп анау ишек алдында дөмәйеп ятҡан ташҡа һөрөндө лә, табаны төшөрөп ярып ҡуйҙы.* Ғ. Дәүләтшин.

**ДӨНӨҮ** *к. ситл.* Йоҡоға китеү, йоҡлап китеү. *Бәрей йоҡлап киткәс, бабай: „Ә-һә-ә, был дөндө!" — ти ҙә, әкрен генә тороп, бер мөйөшкә бара һалып ултыра, ти* (Әкиәттән).

**ДӨҢГӨР** [1] *и.* Түңәрәк тирәскә сей күн киреп яһалған, һуғып уйнай торған боронғо музыка ҡоралы; барабан. *Йоҡларға ятҡан һалдаттарҙы уятып аяҡҡа баҫтырыр өсөн барабансы дөңгөр ҡаҡты.* Ғ. Ибраһимов.

**ДӨҢГӨР** [2] *оҡш.* **1.** Ҡаты нәмә шундай уҡ нәмәгә ҡағылып-һуғылғанда яңғырап сыҡҡан тауышты белдергән һүҙ. *Дөңгөр итеү. Дөңгөр итеп ҡалыу.*

**2.** *диал.* Дуңғырлаҡ. *Тәнзилә әбей ҡолаҡ һалып торҙо ла: — Дөңгөр тауышы ла ишетелә бит. Әллә теге лесник Питрәнең ҡарҙонына етеп киләбеҙ инде,— тине.* М. Тажи.

**ДӨҢГӨР-ДӨҢГӨР** *оҡш.* Ҡабат-ҡабат дөңгөр иткән тауышты белдергән һүҙ. *Дөңгөр-дөңгөр итеү. Дөңгөр-дөңгөр килеү.* ■ *Ҡаты юлда арба тәгәрмәстәре дөңгөр-дөңгөр килеп тәгәрләне.* М. Тажи.

**ДӨҢГӨРЛӘТЕҮ** *к.* Дөңгөр-дөңгөр иттереү, дөңгөр-дөңгөр килтереү. *Шәүәлиә биҙрәһен дөңгөрләтеп иҙәнгә ҡуйҙы.* Р. Низамов.

**ДӨҢГӨРЛӘҮ** *к.* Дөңгөр-дөңгөр итеү, дөңгөр-дөңгөр килеү. *Дөңгөрләп ишетелеү.* ■ *Мирсәй ағай тәгәрмәстәре дөңгөрләгәнен тыңлаған һымаҡ, тының ҡына килә.* Ә. Вәли.

**ДӨҢГӨСЛӘҮ** *к. диал.* Тыңҡыслау. *Дөңгөсләп тултырыу.*

**ДӨҢК** *оҡш.* Ҡаты нәмәгә тос нәмә менән һуҡҡанда сыҡҡан тауышты белдергән һүҙ. *Дөңк итеү. Дөңк итеп ҡалыу.*

**ДӨҢК-ДӨҢК** *оҡш.* Ҡабат-ҡабат дөңк иткән тауышты белдергән һүҙ. *Дөңк-дөңк итеү. Дөңк-дөңк килеү.*

**ДӨҢКӨЛДӘТЕҮ** *к.* Дөңк-дөңк иттереү. *Ғәли элеккe ише түгел, шәбәйеп китте хәҙер. Ҙурҙар кеүек дөңкөлдәтә баҫып йөрөй хәҙер.* Й. Солтанов.

**ДӨҢКӨЛДӘҮ** *к.* Дөңк-дөңк итеү, дөңк-дөңк килеү. *Гәрәй ҡалтыранды. Йөрәк тибеше, ауыр балта менән төйгән кеүек, ҡолаҡ төбөндә дөңкөлдәп ишетелә башланы.* Б. Бикбай.

**ДӨҢКӘЙЕҮ** *к. диал.* Төңкәйеү. *Ярты сәғәт тә үтмәй, ун өс самурайҙың береһе генә теге яҡ ярға ҡасып өлгөрә, ә башҡалары шул урында дөңкәйә.* С. Кулибай.

**ДӨП** *оҡш.* Тос нәмә ҡаты ергә ҡапыл һуғылғанда сыҡҡан тауышты белдергән һүҙ. *Дөп итеү. Дөп итеп бәрелеү. Дөп итеп барып ултырыу.* ■ *Ул [ҡыҙ] бисара артына китеп, ҡалтырап ҡурҡып китеп йығылды дөп итеп* (Бәйеттән).

**ДӨП-ДӨП** *оҡш.* **1.** Ҡабат-ҡабат дөп иткән тауышты белдергән һүҙ. *Дөп-дөп итеү. Дөп-дөп килеү.* ■ *Тын юлда аяҡ тауыштары дөп-дөп итеп, алыҫтарға ишетелеп тора.* З. Биишева.

**2.** *күсм.* Көслө, ҡаты йөрәк тибешен белдерә. *Дөп-дөп тибеү.* ■ *Шыпырт ҡына баҡсаға табан барабыҙ. Йөрәк дөп-дөп һуға.* Т. Йәнәби.

**ДӨПӨЛДӘТЕҮ** *к.* **1.** Дөп-дөп иттереү, дөп-дөп килтереү. *Дөпөлдәтеп бейеү. Дөпөлдәтеп һөйөү. Дөпөлдәтеп һуғыу.* ■ *Дөпөлдәтә баҫып Сәрбиямал килеп сыҡты.* З. Биишева. *Иркәбикә инәй .. Сәмиҙең арҡаһынан бала һымаҡ итеп дөпөлдәтеп һөйөргә кереште.* Ф. Рәхимғолова.

**2.** *һөйл.* Атып үлтереү, атыу. *[Арестантты] нигә үлтерҙең? — тип һораны Нигмәтулла.— Сыҙаманым. Миңә йәбешергә киҙәнгәйне. Шуға дөпөлдәттем..,— тине Ҡолсобай.* Я. Хамматов.

**ДӨПӨЛДӘҮ** *к.* Дөп-дөп итеү, дөп-дөп килеү. *Дөпөлдәп йүгереү.* ■ *«На-а, хайуанҡай!» — тигән тауыш менән дөпөлдәгән тояҡ тауыштары ишетелә.* С. Кулибай. *Заводтар дөпөлдәп, туҡылдап, сүкештәр зыңҡылдап, доңҡолдап .. эшләйҙәр күмәкләп .. эшсе һәм игенсе бер булып.* Ғ. Сәләм./*күсм.* Көслө, ҡаты һуғыу (йөрәк тибеше тураһында). *Дөпөлдәп тибеү. Йөрәк дөпөлдәй.* ■ *Атаһын хәтерләү менән уның [Азаматтың] йөрәге дөпөлдәп тибә лә башлай. Саҡ ҡысҡырып илап ебәрмәй.* Ә. Бикчәнтәев.

**ДӨПӨЛДӘШЕҮ** *к. урт. ҡар.* **дөпөлдәү.** *Дөпөлдәшеп йүгереү.*

**ДӨПТӨРЛӘҮ** *к. диал.* Тыптырлау. *Кәмәсе ағай ауыр итектәре менән дөптөрләп килеп етте.* Ф. Иҫәнғолов.

**ДӨПТӨРЛӘШЕҮ** *к. урт. ҡар.* **дөптөрләү.** *Тай-тулаҡ дөптөрләшеп сабып, кәртәгә килеп инде.*

**ДӨР** *оҡш.* Ут бик шәп янғанда сыҡҡан тауышты белдергән һүҙ. *Дөр итеп тоҡаныу. Дөр килеү.* ■ *Май берендә ер шарында янған уттар дөр килә.* Б. Вәлит.

♦ **Дөр итеү** 1) ҡапыл ҡыҙыу, ярһыу. *Дөр итеп ҡалыу. Дөр итеп тоҡаныу. Бер һүҙ әйтер хәл юҡ — дөр итә лә китә;* 2) күмәкләп ҡапыл шаулашып күтәрелеү. *Урмәксенән курмәксе, барыһы шуның артынан дөр итеп әйәрәсәк.* Б. Бикбай.

**ДӨРГӨН** *с. диал. ҡар.* **берҙәм** 2. *Эшкә дөргөн тотоноу.* ■ *Сәсеү ҡырҙарына төйнәү көстөң дөргөн елен барып өрҙөләр.* Б. Вәлит.

**ДӨР-ДӨР** *оҡш.* Ут шәп, көслө ялҡынланып, шаулап янғанда сыҡҡан тауышты белдерә. *Дөр-дөр итеү. Дөр-дөр килеп яныу.*

**ДӨРЛӘТЕҮ** *к.* **1.** Көслө итеп ялҡынландырып яндырыу. *Был ваҡытта инде һылыуҙың килене сыуалды дөрләтеп яғып ебәргән ине.* Т. Йәнәби.

**2.** *күсм.* Көслө хис менән ярһытыу. *Килһәң әгәр, һөйөү, кил дә әйҙә, йәшен булып дөрләт йөрәкте.* С. Әлибаев.

**ДӨРЛӘҮ** *к.* **1.** Дөр итеү, дөр килеү; гөрләү. *Дөрләп янған усаҡ. Ҡапыл дөрләп китеү. Дөрләп тороу.* ■ *Ҡоро төптәр, ағас ботаҡтары, ялҡын бөркөп дөрләп яналар.* Ғ. Мәсғүт.

**2.** *күсм.* Көслө хис менән ныҡ ярһыу. *Дөрләп тоҡанып китеү.* ■ *Был йән әсеһе көсәйеп, дөрләп китә лә, йәш ҡатын үҙенә урын таба алмай башлай.* Х. Зарипов.

**ДӨРЛӘШЕҮ** *к. урт. ҡар.* **дөрләү** 2. *Әлегә шым ғына ултырған халыҡ тағы ҡупҡалйығандай булды. Тағы дөрләшеп ҡул күтәрҙеләр.* Ғ. Дәүләтшин.

**ДӨРМӘН** *и. диал.* Алабуға.

**ДӨРӨЛДӘТЕҮ** *к. ҡар.* **дөрләтеү.**

**ДӨРӨЛДӘҮ** *к. ҡар.* **дөрләү.** *Дөрөлдәп яныу.*

**ДӨРӨЛДӘШЕҮ** *ҡ. урт. ҡар.* **дөрөлдәү.** *Бер туктауһыҙ дөрөлдәшеп машиналар үтеп тора.*

**ДӨРӨМ** *с. диал. ҡар.* **берҙәм** 2. *Беҙҙең ауыл халҡы бик дөрөм ул.* Һ. Дәүләтшина.

● *Бәхетлененң ҡунағы дөрөм-дөрөм.* Әйтем.

**ДӨРӨН** *р. диал.* Тиҙ, етеҙ.

**ДӨРӨҪ** [*фарс.*] *с.* **1.** Ысынбарлыҡты теүәл күрһәткән, факттарға, хәҡиҡәткә тура килгән; ысын, хаҡ. *Дөрөҫ мәғлүмәт. Дөрөҫ һүҙ. Дөрөҫ булыу.//Дөрөҫөн белеү. Дөрөҫтө әйтеү. Дөрөҫөн йәшереү.//Дөрөҫ һөйләү. Яуапты дөрөҫ биреү.* ■ *Күрәбеҙ, бөйөк даһиҙың һүҙҙәре дөрөҫ булған.* Р. Ниғмәти. *Айыуғолаҡ Сәмрегошҡа дөрөҫтө һөйләп бирҙе, ти* (Әкиәттән). *Валлаһи, дөрөҫ яҙҙым мин баштан үткән хәлдәрҙе* (Бәйеттән).

**2.** Тейешле талап, ҡағиҙә, нормаға тура килгән, шул ҡағиҙәләрҙе боҙмаған. *Дөрөҫ яҙыу ҡағиҙәләре.//Дөрөҫ аңлатыу. Дөрөҫ йырлау. Дөрөҫ тәржемә итеү. Дөрөҫ уҡыу. Мәсьәләне дөрөҫ сығарыу. Приборҙарҙы дөрөҫ ҡулланыу.* ■ *Мин рус телен яҡшылап белмәйем, белгән тиклемен дә дөрөҫ яҙа алмайым.* Д. Юлтый./ Тейешле тәртип, әхлаҡ ҡағиҙәләренә ҡаршы килмәгән, шуларға ярашлы. *Дөрөҫ булыу. Дөрөҫ итеү.* ■ *— Шулай ҙа шулай,— тип һөйләп бирә егет. — Беҙҙең никах дөрөҫ буламы? — тип һорай* (Әкиәттән).

**3.** Тоғролоҡҡа ярашлы, тоғролоҡло; ғәҙел. *Дөрөҫ кеше. Дөрөҫ ҡылыҡ. Дөрөҫ юлға баҫыу. Дөрөҫ юлда тороу.*

**4.** Ҡуйылған талаптарға яуап биргән, маҡсатҡа ярашлы. *Дөрөҫ йүнәлеш. Дөрөҫ тәрбиә биреү.* ■ *Партия, комсомол ағзаһы халыҡтың артынан эйәреп барыусы түгел, ә уларҙы ойошторорға, етәкләргә дөрөҫ йүнәлеш бирә белергә тейеш.* М. Тажи.

**5.** Ғәҙәттәгесә була торған хәл, хәл-тормошҡа тура килгән, аныҡ, сәләмәт (кеше хәленә ҡарата). *Дөрөҫ булыу. // Бармаҡтары дөрөҫ йөрөй. Бала башын дөрөҫ тотмай.* ■ *Башта беҙ дөрөҫ атлап сыҡтыҡ. Ҡыҙҙар тапҡырынан үткәндә аяҡтар яңылышты.* Д. Юлтый.

**6.** *инш.* Берәй һүҙ, эш һ. б. хуплап, раҫлап әйтелә: эйе, шулай шул, шулай. *Атайым уның [олатайҙың] һүҙен ҡеүәтләй: „Дөрөҫ“ — ти.* З. Биишева. *Дөрөҫ, ҡыҫҡа ғүмер эсендә мин аҙ күрҙем һөйөнөс.* Х. Ҡунаҡбай.

◆ **Дөрөҫкә килеү** алдан әйтелгән һүҙ, хәбәр расланыу. **Дөрөҫкә сығыу** *ҡар.* **дөрөҫкә килеү. Дөрөҫөн әйткәндә, дөрөҫөнән дә, дөрөҫө** нимәнеңдер ысынлығына баҫым яһау өсөн әйтелә: ысынлап та, ысынын әйткәндә. *Дөрөҫөн әйткәндә, мәғәнә — һый артып ҡалыуҙа түгел, күңел табыуҙа.* Б. Бикбай. *Дөрөҫөнән дә Салихтың миңә бик яҡын, бик йылы дуҫлығы бар.* С. Агиш.

● *Дөрөҫ һүҙҙең яты юҡ.* Әйтем. *Дөрөҫ һүҙгә яуап юҡ.* Әйтем. *Дөрөҫ эшкә баҙнатлы бул.* Әйтем. *Дуҫың дуҫ булһын, иҫәбе дөрөҫ булһын.* Әйтем. *Кеше ышанмаҫ хәбәрҙе дөрөҫ булһа ла һөйләмә.* Әйтем.

**ДӨРӨҪЛӨК** *и.* **1.** Дөрөҫ (1, 2, 5, 6 мәғ.) булған хәл. *Дөрөҫлөгө бар. Дөрөҫлөгөн белеү. Дөрөҫлөгөн тикшереү.* ■ *Дөрөҫлөк еңде ялғанды — өҙөлгән дуҫлыҡ ялғанды.* Н. Нәжми.

**2.** Тоғролоҡҡа ярашлы эш-хәл; ғәҙеллек. *Дөрөҫлөккә барыу.* ■ *Беҙ дөрөҫлөктө эҙләргә, шул дөрөҫлөк өсөн билғау һалып уны табыу яғын ҡарарға [тейеш].* Т. Хәйбуллин. *Хаҡлыҡ, дөрөҫлөккә хөкөм юҡ. Ялған ҡулы етмәҫ дөрөҫлөккә, ул юғары, уға үлем юҡ.* Ҡ. Даян.

● *Дөрөҫлөк — яуған ҡарҙан, һауған һөттән аҡ, аҡҡан һыуҙан паҡ.* Әйтем. *Үҙеңдә булмаған дөрөҫлөктө кешенән эҙләмә.* Әйтем. *Дөрөҫлөк алдаҡсының күҙен тишә.* Әйтем.

**ДӨРӨҪЛӘНЕҮ** *ҡ.* **1.** *төш. ҡар.* **дөрөҫләү.**

**2.** Дөрөҫ булып сығыу, дөрөҫкә сығыу, дөрөҫ булыу. *Беҙҙең һүҙ дөрөҫләнде.*

**ДӨРӨҪЛӘТЕҮ** *ҡ. йөкм. ҡар.* **дөрөҫләү.** *Һүҙҙе дөрөҫләтеү. Булған хәлде дөрөҫләтеү.* ■ *Ул [Новиков] ҡайһы бер факттарҙы һалдаттарҙың үҙҙәренән дөрөҫләтеп, уларға аңлатырға тырышты.* Д. Юлтый.

**ДӨРӨҪЛӘҮ** *ҡ.* **1.** Дөрөҫ тип белдереү; раҫлау. *Һүҙҙе дөрөҫләү. Әйткәнде дөрөҫләү.* ■ *—Һин комсомолмы?..— Әйе,— тинем, батыр рәүештә дөрөҫләнем.* С. Агиш./ Дөрөҫ икәнен күрһәтеү, белгертеү; раҫлау. *Яҙ килә. Дөрөҫләгән төҫлө уны, тамсылар туп-туп килә.* Ф. Рахимғолова.

**2.** Дөрөҫ итеү; төҙәтеү. *Сәғәтте дөрөҫләү. Дөрөҫләп ҡуйыу.*

**ДӨРӨҮ** *ҡ.* **1.** Этәреү, ышырыу. *Ҡыйҙы тырма менән дөрөү.*

**2.** *ҡусм.* Ҡыҙыулатыу, ниндәйҙер бер эш, хәрәкәт һ. б. шәп, ҡыҙыу тиҙлек менән башҡарыу. *Дөрөп алып китеү.* ■ *Дәртле егеттәр бар ул ... Халыҡ бер ауыҙҙан торһа, хәҙер улар эште дөрөп алып китергә торалар.* Д. Юлтый. *Әгәр дошман балыҡ булып һыуға сумһа, .. бел: урын юҡ хәшәрәткә беҙҙең һыуҙа,— суртан булып, дөрөп сығар, батыр улым!* Р. Ниғмәти.

**ДӨРӨШӨП** *р. һөйл.* Этәрешеп, төртөшөп, ҡыҙыу хәрәкәт итеп. *Клубҡа дөрөшөп килеп инделәр.*

**ДӨРРӘ** [*ғәр.*]: **дөррә йәтим** *иҫк.* һирәк осраған ынйы. *Йәш ғүмерҙең бәйәһе юҡ — дөррә йәтим, йәш ғүмергә был донъяла табылмаҫ тиң.* М. Ғафури.

**ДӨРҪ** *оҡш.* **1.** Ауыр, ҙур нәмә ергә ауғанда сыҡҡан тауышты белдергән һүҙ. *Малай ярһып, арт яғына дөрҫ итеп йығылып та китте.* Й. Солтанов.

**2.** *ҡусм.* Йөрәктең ныҡ һуғыуы тураһында әйтелә.

**ДӨРҪ-ДАРҪ** *оҡш.* Дөрҫ һәм дарҫ иткән төрлө тауыштарҙы белдергән һүҙ. *Дөрҫ-дарҫ атлап килеү. Дөрҫ тә дарҫ йөрөү.* ■ *Малайҙар Әхмәтша бабайҙың кәйефе юҡлығын ишектән дөрҫ-дарҫ атлап инеүенән үк һиҙеп алдылар.* Ф. Әсәнов.

**ДӨРҪ-ДӨРҪ** *оҡш.* **1.** Ҡабат-ҡабат дөрҫ иткән тауышты белдергән һүҙ. *Дөрҫ-дөрҫ итеп йығылыу.*

**2.** *ҡусм.* Йөрәктең йыш-йыш һуғыуы тураһында әйтелә. *Әмир маңлайындағы тирҙе еңе менән һөртөп алды. Йөрәге дөрҫ-дөрҫ тибә, ә үҙе рәхәт.* Х. Ғиләжев.

**ДӨРҺӨЛДӘТЕҮ** *к.* Дөрҫ иткән көслө тауыш сығарыу, дөрҫ итеү.

**ДӨРҺӨЛДӘҮ** *к.* **1.** Дөрҫ-дөрҫ итеү, дөрҫ-дөрҫ килеү. *Көнө-төнө дөрһөлдәп урамдан танкылар, туптар, автомашиналар, .. пехота ғәскәрҙәре уҙалар ҙа уҙалар.* В. Бикбай. *Ботаҡ һынып китә лә, айыу дөрһөлдәп барып ергә төшә* (Әкиәттән).

**2.** *күсм.* Йыш-йыш итеп ныҡ, ҡаты һуғыу (йөрәк тибеше тураһында). *Сәкинәнең йөрәге дөрһөлдәп тибергә тотонды.* Н. Мусин.

**ДӨРӘ** *и. диал.* Тапҡыр, мәртәбә. *Әхмәҙи бейеү көйөн уйнап ебәрҙе. Йәштәр бер дөрә бейеп алды.* Ж. Кейекбаев.

**ДӨРӘН** *и. диал.* Төрән.

**ДӨХ** [*фарс.*] *и. иҫк. шаяр.* Ҡатын, ҡыҙ.— *Бәй, быныһы ниндәй дөх һуң әле? Ҡасан танышып өлгөрҙөң?* С. Кулибай.

**ДӨҺӨР** *окш.* Күк күкрәгәндә, буш арба менән ҡаты юлдан барғанда сыҡҡан тауышты белдергән һүҙ. *Дөһөр итеү.*

**ДӨҺӨР-ДАҺЫР, дөһөр ҙә даһыр** *окш.* Дөһөр һәм даһыр иткән төрлө тауыштарҙы белдергән һүҙ. *Дөһөр-даһыр килтереп өҫтәлде шылдырыу.* ■ *Күк дөһөр-даһыр итеп калды, ямғыр яуып та ебәрҙе.* Т. Морат.

**ДӨҺӨР-ДӨҺӨР** *окш.* Ҡабат-ҡабат дөһөр иткән тауышты белдергән һүҙ. *Дөһөр-дөһөр итеү. Дөһөр-дөһөр килеү.*

**ДӨҺӨРЛӘТЕП** *р.* **1.** Дөһөр-дөһөр иттереп, дөһөр-дөһөр килтереп. *Дөһөрләтеп баҫып йөрөй. Дөһөрләтеп күк күкрәй.*

**2.** *күсм.* Дәрт, көс, ҡыҙыу тиҙлек менән, шәп, яҡшы итеп. [*Тракторҙар*] *дөһөрләтеп иген сәсеп йөрөй.* Й. Солтанов.

**ДӨҺӨРЛӘҮ** *к.* Дөһөр-дөһөр итеү. *Алыҫтан йәшен йәшнәп, күк дөһөрләгән тауыш ишетелә.* Ш. Янбаев.

**ДӨҺӨР-ШАТЫР** *окш. кар.* **дөбөр-шатыр.**

**ДӨҺӘНДӘЙ** *с. диал.* Уҫлаптай. *Дөһәндәй кәүҙә.*

**ДРА́ГА** [*рус.*] *и.* Һыу төбөнән файҙалы ҡаҙылдыҡлы ҡом-ҡырсын сығарыуға тәғәйенләнгән йөҙөп йөрөй торған машина. *Драга менән алтын ҡаҙыу.* ■ *Драгалар .. күлдәрҙе йөҙөп, сылбыр-сылбыр теҙелгән ауыр сүместәрен күл төбөнә сумырып, тау тоҡомдарын һоҫоп сығарҙы, һыуҙы эшкәртте.* Я. Хамматов.

**ДРАГУ́Н** [*рус.* ⟨ *фр.*] *и.* Элекке батша армияһы һәм ҡайһы бер сит ил армияһындағы һыбайлы ғәскәрҙә хеҙмәт иткән һалдат йәки офицер. *Драгундар полкы.* ■ *Батыршаны иллегә яҡын драгун һәм һыбайлы казаҡ һаҡлап бара.* Ғ. Хөсәйенов.

**ДРАЖ** *и. кар.* **тыраж.**

**ДРА́МА** [*рус.* ⟨ *гр.*] *и.* **1.** Сәхнәлә башҡарыу өсөн диалог формаһында автор телмәреһеҙ яҙылған әҙәби әҫәр төрө. *Ике шаршаулы драма.*

**2.** Шул төрҙәге етди эстәлекле әҫәр (комедия һәм трагедиянан айырылып тора). *Сәғит Мифтахов драмалары.*

**3.** *күсм. кит.* Ауыр ҡайғылы, фажиғәле хәл. *«Ҡара йөҙҙәр» повесының үҙәгендә Ғәлимә драмаһы тора.* З. Шәрҡи.

◆ **Драма түңәрәге** үҙешмәкәр театр түңәрәге. *Драма түңәрәгенә йөрөү.*

**ДРАМАЛАШТЫРЫУ** *к.* **1.** Драмаға, сәхнә әҫәренә әйләндереү.

**2.** Низағдар көсөргәнешлеген үҫтереү. *Ролде нык драмалаштырыу.*

**ДРАМАТИ́ЗМ** [*рус.*] *и.* **1.** Драмаға хас көсөргәнешлек. *Романдарҙың [«Ҡан», «Һалдаттар»] төп етешһеҙлеге: уларҙа драматизм үткер түгел.* Ә. Вахитов.

**2.** *күсм. кит.* Хәл-ваҡиғаның көсөргәнешлеге, ауырлығы, ҡайғылы, ғазаплы кисерештәр. *Кеше яҙмышының драматизмы.*

**ДРАМАТИК** *с.* **1.** Драма рәүешендәге, сәхнә өсөн ижад ителгән. *Драматик әҫәр. Драматик артист.*

**2.** *күсм. кит.* Ауыр кисерешле, көсөргәнешле. *Драматик ваҡиға.*

**ДРАМАТУ́РГ** [*рус.*] *и.* Драма, сәхнә әҫәре ижад итеүсе, яҙыусы. *Башҡорт драматургы Д. Юлтый. «Ҡарағол» трагедияһын яҙа. Был әҫәр һәм идеологик һәм әҙәби яҡтан һәр төрлө тәнкитте күтәрерлек көслө драма әҫәре була.* М. Мәһәҙиев.

**ДРАМАТУРГИК** *с.* Драматургияға мөнәсәбәтле. *Драматургик оҫталыҡ.*

**ДРАМАТУРГИ́Я** [*рус.* ⟨ *гр.*] *и.* **1.** Драматургик сәнғәт. *Драматургия, әҙәби жанр булараҡ, үҙенсәлекле шарттарҙа йәшәй.* Н. Нәжми.

**2.** *йыйн. эҙ.* Драма әҫәрҙәре йыйылмаһы (ниндәйҙер яҙыусының, халыҡтың, осорҙоң һ. б. драматик әҫәрҙәре). *Башҡорт драматургияһы. Б. Бикбай драматургияһы. Утыҙынсы йылдар драматургияһы.* ■ *Башҡорттоң үҙ драматургияһы бар ине. Юғарыла күрһәтелгән пьесалар: «Салауат», «Аҡшан батыр», «Ҡарағол», «Ашҡаҙар» беҙҙең йәш репертуарыбыҙҙы тәшкил итә.* Д. Юлтый.

**3.** Драматургик әҫәр яҙыу теорияһы. *Драматургия курсы. Драматургия нигеҙҙәре.*

**ДРАМТҮҢӘРӘК** *и. һөйл.* Драма түңәрәге (*кар.* **драма**). *Драмтүңәрәк ағзаһы. Драмтүңәрәк етәксеһе.*

**ДРАНЪЯ** [*рус.* драньё] *и. диал.* Транса. *Дранъянан япҡан клуб башын ҡайнар нурҙар килеп үбәләр.* Х. Хәйри.

**ДРАП** [*рус.* ⟨ *фр.*] *и.* Тышҡы өҫ кейеме һ. б. өсөн ҡулланылған ҡалын, беше йөн туҡыма. *Драптан пальто тегеү.//Драп пальто.* ■ *Ишек төбөндә өҫтөнә һоро пальто һәм шундай уҡ драптан тегелгән кепка кейгән оҙон кәүҙәле кеше баҫып тора ине.* Ә. Вәли.

**ДРА́ХМА** [*рус.* ⟨ *гр.*] *и.* **1.** Боронғо Грецияла алтын һәм көмөш аҡса, шулай уҡ хәҙерге Грецияла аҡса берәмеге.

**2.** Метрик система индерелгәнгә ҡәҙәр ҡулланылған 3,73 грамға тигеҙ аптека үлсәүе берәмеге.

**ДРЕЗИ́НА** [*рус.* ⟨ *нем.*] *и.* Тимер юлда двигатель йәки ҡул көсө менән йөрөтөлә торған механик бәләкәй арба. *Оҙон немец дрезинаға ултырып зенитчиктар яғына китеп бара ине.* Ә. Бикчәнтәев.

**ДРЕЙФ** [*рус.* ⟨ *гол.*] *и.* Хәрәкәт итеп барған карап, самолеттың ел йәки һыу ағымы арҡа-

һында йүнәлешен үҙгәртеүе. / Һыу өҫтөндәге нәмәләрҙең боҙ, карап кеүек ел йәки һыу ағымы ыңғайына йөҙөп йөрөүе.

**ДРЕЛЬ** [*рус.* 〈*гол.*] *и. тех.* Тишек тишкәндә бырауҙы һ. б. ҡорамалдарҙы әйләндерә торған механизм. *Электрик дрель. Ҡул дреле.*

**ДРЕНА́Ж** [*рус.* 〈*фр.*] *и. тех.* **1.** Канау һәм торбалар үткәреп, һаҙлыҡтарҙы киптереү эше һәм шул торбалар, канауҙар үткәреп һаҙлыҡтарҙы киптереү системаһы. *Дренаж скважиналары. Дренаж торбалары.*

**2.** *мед.* Тишекле көпшә, марля һ. б. ярҙамында яранан эрен һ. б. сығарыу ысулы.

**3.** *мед.* Эрен, һүлде ағыҙыу өсөн тәнгә, яраға индереп ҡуйыла торған резина йәки быяла көпшә. *Дренаж индереү.*

**ДРЕНАЖЛАУ** *к.* **1.** *мед.* Дренаж (1 мәғ.) менән киптереү (һаҙлыҡ һ. б. ерҙәрҙе).

**2.** *мед.* Дренаж (2 мәғ.) ысулы менән яранан, шештән эрен һ. б. һурҙырыу.

**ДРЕССИРО́ВКА** [*рус.*] *и. һөйл.* Билдәле күнекмәләр менән (йәнлектәрҙең) ниндәйҙер хәрәкәттәр яһарға өйрәтелеүе. *Дрессировка яһау.*

**ДРЕССИРО́ВЩИК** [*рус.*] *и.* Дрессировка менән шөғөлләнгән кеше.

**ДРОБИ́ЛКА** [*рус.*] *и. һөйл.* Ваҡлау машинаһы; ваҡлағыс.

**ДРУЖИ́НА** [*рус.*] *и.* **1.** Ниндәйҙер бер маҡсат менән ойошҡан ирекле төркөм, отряд. *Пожар дружинаһы. Халыҡ дружинаһы. Пионер дружинаһы.*

**2.** Боронғо Руста кенәз ғәскәренең төп нигеҙен тәшкил иткән, кенәз-феодалдың шәхси хужалығы һәм кенәзлеге менән идара итеүҙә ҡатнашҡан кенәз янындағы ҡораллы төркөм. *Махсус ҡаҙна аҡсаһынан тыш, байҙарҙың үҙ аҡсаларына ғына бай, сауҙагәр малайҙарынан дружиналар .. фронтҡа ебәрәләр.* З. Шәрҡи.

**3.** *тар.* Революцияға тиклемге Россияла ополчениелағы ғәскәр төркөмө, ғәскәр бүлеге.

**ДРУЖИ́ННИК** [*рус.*] *и.* Дружина ағзаһы булған, дружинала торған кеше. *Александр Невский һәм уның дружинниктары үҙ илеңде һаҡлап ҡалыу өсөн [дошманды] тар-мар итеү кәрәклеген яҡшы белә.* Ә. Харисов. *Йәмәғәт тәртибен һаҡлауҙа милиция менән иңгә-иң килеп эшләп, күп кенә халыҡ дружинниктары ҡыйыулыҡ һәм батырлыҡ күрһәтә.* «Совет Башҡортостаны», 1986, 29 ғинуар.

**ДУАЛИ́ЗМ** [*рус.* 〈*лат.*] *и.* **1.** Донъяның нигеҙендә бер-береһенә ҡапма-ҡаршы булған материаль һәм идеаль башланғыс (материя һәм рух) ята тип ҡараған философик тәғлимәт; *киреһе* монизм.

**2.** *кит.* Икегә айырылғанлыҡ, нимәнеңдер ике төрлөлөгө.

**ДУАЛИ́СТ** [*рус.*] *и.* Дуализм (1 мәғ.) яҡлы кеше.

**ДУАЛИСТИК** *с.* Дуализмға хас. *Дуалистик ҡараш. Дуалистик философия.*

**ДУБЛЁР** [*рус.* 〈*фр.*] *и.* **1.** Икеһе бер төрлө эш башҡарған һәм кәрәк ваҡытта береһе икенсеһен алмаштыра алған; алмаш. *Дублёр булыу.*

**2.** Театрҙа ролдең төп башҡарыусыһын алмаштырған артист. / Фильмды тәржемә иткәндә тексты бер телдән икенсе телгә әйләндереп һөйләүсе артист.

**ДУБЛЁТ** [*рус.* 〈*фр.*] *и.* Бер төрлө нәмәнең икенсе данаһы. *Китаптың дублеты.*

**ДУБЛИКА́Т** [*рус.* 〈*лат.*] *и.* Берәй документтың төп нөсхә менән бер үк юридик хоҡуҡта булған күсермәһе.

**ДУБЛЯ́Ж** [*рус.* 〈*фр.*] *и. кино* Берәй телдә сығарылған тауышлы кинофильмдың тауыш өлөшөн икенсе телгә күсереп сығарыу эше. *Дубляж яһау.*

**ДУҒА** [*рус.* дуга] *и.* **1.** Ике тәртәне ҡамытҡа бәйләп нығытыу өсөн ике яҡ осо ҡамыт бауына кейҙерелеп ҡуйыла торған, ағастан бөгөп яһалған ат егеү ҡорамалы. *Ҡайын дуға. Ҡарама дуға. Дуға бөгөү.* ■ *Күк аттар, дуғаларына тағылған ҡыңғырауҙарының көмөш тауыштары менән тын ауыл урамын яңғыратып .. сығып киттеләр.* Ғ. Дәүләтшин. *Ҡарама ла дуға, әй тал дуға — тал дуғалар килмәй тартыуға* (Халыҡ йырынан).

**2.** Дуға һымаҡ бөгөлөп торған, дуға рәүешендәге нәмә. *Йәйәк дуғаһы.*

**3.** *һөйл.* Атлы кешеләрҙе иҫәпләү берәмеге. *Ун дуға ылау.* ■ *Былар ҡырҡ дуға булып юлға сығып киттеләр, ти* (Әкиәттән).

**4.** *этн.* Саҡырылған ҡунаҡтарҙың һанын иҫәпләү берәмеге (ғәҙәттә бер пар ғаилә). *Ун дуға ҡунаҡ.* ■ *Аҙна-ун көндән Ташбатҡан ауылына Түйралынан туғыҙ дуға ҡоҙа килде.* Ж. Кейекбаев. *Тойғон ҡарт үҙенең туғандары менән бер нисә дуға ҡунаҡ булып, өс көн, өс төн ҡыҙҙың атаһына киләләр* (Әкиәттән).

◆ **Дуға бөгөү** 1) нығ өшөү; 2) нығ асығыу.
● *Яҡшы аға ил көтһә, илгә дуға тултырыр; яман аға ил көтһә, илгә дошман тултырыр.* Әйтем.

**ДУҒАЛАНДЫРЫЛЫУ** *к. төш. кар.* **дуғаландырыу.** *Уның [Сараның] кәләм менән һыҙып дуғаландырылған ҡаштары, сағыу итеп буялған ирендәре — үҙенә килешеп тора.* З. Биишева.

**ДУҒАЛАНДЫРЫУ** *к.* Дуға һымаҡ итеп бөгөү, дуға кеүек итеү. *Һөлөк кеүек шыма, һимеҙ айғырҙар муйындарын дуғаландырып, бейәләр артынан йүгерә.* Ш. Шәһәр.

**ДУҒАЛАНЫУ** *к.* Дуға һымаҡ булып бөгөлөү, дуға һымаҡ булыу. *Дуғаланып торған ҡаш.* ■ *Дуғаланып аҡҡан Дим буйында .. ҡармаҡ һалды ҡарттар балыҡҡа.* Ғ. Ғүмәр.

**ДУҒАЛЫ** *с.* **1.** Дуғаһы бар, дуға кейҙерелгән. *Ҡарт: .. Иллә мәгәр мин һине [егет] алтын дуғалы толпарың менән йөҙ һумың өсөн буш ҡул ебәрә алмайым .. бүләк бирергә тейешмен* (Әкиәттән).

**2.** Дуға (3 мәғ.) менән иҫәпләнгән. *Ун дуғалы ҡунаҡ.* ■ *[Әлфиә — Ғәлләмгә:] Ун ике дуғалы ҡунаҡ саҡырҙыҡ та шуның менән вәссәләм.* С. Кулибай. *Тыуған ай дуғалы булһа, дауыл була.* Һынамыш.

**ДУҒАСЫ** *и.* Дуға бөгөүсе, яһаусы.

**ДУҒЫН** *и. диал.* Туғын.

**ДУДА́Ҡ** [*төрк.*] *и. иҫк. кит.* Ирен. *Булһа ауыҙың тешһеҙ, ни файҙа шул дудаҡтарҙан.* М. Өмөтбаев.

**ДУ́МА** [*рус.*] *и.* Революцияға тиклемге Россияла: үҙәктәге һәм урындағы идара ойошмаларының атамаһы. *Думаға һайлау.* **Баярҙар думаһы** Мәскәү Русында баярҙар советы. **Ҡала думаһы** революцияға тиклемге Россияла закондар сығарыу вазифаһы йөкмәтелгән, һайланып ҡуйылған вәкилдәр учреждениеһы. *1870 йылда ҡала думалары ойошторолған.*

**ДУМБАЙ** *с.* Ауыр һөйәкле, һүлпән, мыштыр. *Думбай булма, вайымлы бул һәр ерҙә.* А. Игебаев.

**ДУМБЫЙ** *р. диал.* Арыу уҡ. *Думбый эшкә яраған бит был бала.*

**ДУМБЫРА** *и.* Ҡайһы бер төрки халыҡтарында сиртеп уйнай торған оҙон тотҡалы ҡыллы музыка ҡоралы. *Башҡорт думбыраһы. Ҡаҙаҡ думбыраһы. Думбыра сиртеү.* ■ *Заятүләк үләңгә, думбыраға оҫта, төҫкә-башҡа матур була.* М. Ғафури. *Һәр ерҙә уйын-көлкө, думбыра ҡағып, үләң әйтеү яңғырай.* Ғ. Ғүмәр.

**ДУМБЫУ** *к. диал.* Тумбыу.

**ДУМПКА́Р** [*рус.* ⟨ *ингл.*] *и. тех.* Үҙе бушатыла торған вагон. *Думпкарҙарҙы ремонтлау.* ■ *Баҫҡыстарҙа оҙон, ауыр думпкарҙар таҡҡан электровоздар йөрөп тора.* З. Ғәлимов.

**ДУНАЛА** *и. диал.* Энәлек.

**ДУНҒЫҘ** *и.* Хужалыҡта ит, май, тиреһе өсөн асралған ҡыҫҡа аяҡлы, тотош кәүҙәле, томшоғо алға һуҙылып торған айыры тояҡлылар ғаиләһенә ҡараған һөтимәр хайуан; суска. *Ата дуңғыҙ. Инә дуңғыҙ. Дуңғыҙ балаһы. Дуңғыҙ ите.* ■ *Минең кеше көнлө .. ерәнес булыуыма,.. әнә осондай ҙа ярҙам ала алмай урамда, сүп-сар араһында дуңғыҙ һымаҡ аунауыма .. минең ни ғәйебем бар һуң.* Т. Хәйбуллин. **Дуңғыҙҙан бер бөртөк ҡыл** һаран кеше тураһында әйтелә. / Тыңлауһыҙ, тәртипһеҙ балаға ҡарата әрләп әйтелә.— *Хәҙер мин ҡайтып, эт һыйын килтереп юнайым әле ул дуңғыҙҙың.* Һ. Дәүләтшина.

♦ **Дуңғыҙ айрауығы** *ҡар.* **айрауыҡ. Дуңғыҙ йылы** ун ике йыллыҡ мөсәлдең ун икенсе йылы (*ҡар.* **мөсәл**).

● *Дуңғыҙға эйәргән — батҡаҡҡа аунаған.* Әйтем. *Ил аулаҡ булһа, дуңғыҙ түбәгә менә.* Мәҡәл.

**ДУНҒЫЛДАҠ** *и. диал.* Дуңғырлаҡ. *Дуңғылдаҡ тағыу.*

**ДУНҒЫР** *оҡш.* Ҙур ҡыңғырау, ағас һауыт-һаба ҡағылып-һуғылғанда сыҡҡан тауышты белдергән һүҙ. *Дуңғыр итеү.*

**ДУНҒЫР-ДУНҒЫР** *оҡш.* Ҡабат-ҡабат дуңғыр иткән тауышты белдергән һүҙ. *Дуңғыр-дуңғыр килеү. Дуңғыр-дуңғыр итеү.*

**ДУНҒЫРЛАҠ** *и.* Малдың муйынына таға торған ҙур ҡыңғырау. *Еҙ дуңғырлаҡ. Дуңғырлаҡ тағыу.* ■ *Ағас араларында дуңғырлаҡ һәм ҡош тауыштары ишетелә.* Б. Вәлит. *Серле урман ...Ҡайҙалыр һыйырҙар көйшәгәне, дуңғырлаҡ тауышына ҡушылып ҡола бейәнең бышҡырғаны ишетелә.* В. Әхмәҙиев.

**ДУНҒЫРЛАТЫУ** *к.* Дуңғыр-дуңғыр иттереү. *Баҫыуға китер халыҡ һуҡа-һабан дуңғырлатып.* Ш. Бабич.

**ДУНҒЫРЛАУ** *к.* Дуңғыр-дуңғыр итеү. *Дуңғырлап килеү.* ■ *[Исхаҡ] ағас көбөнө дуңғырлығы сығарып, ҡымыҙ бешә.* Ш. Янбаев.

**ДУНҒЫРЛАШЫУ** *к. урт. ҡар.* **дуңғырлау.**

**ДУНҠ** *оҡш.* Ҡаты тос ҙур нәмәгә тос нәмә менән һуҡҡанда сыҡҡан тауышты белдергән һүҙ. *Дуңҡ итеү. Дуңҡ итеп ҡалыу.*

**ДУНҠ-ДУНҠ** *оҡш.* Ҡабат-ҡабат дуңҡ иткән тауышты белдергән һүҙ. *Дуңҡ-дуңҡ итеү. Дуңҡ-дуңҡ килеү.*

**ДУНҠЫЛДАТЫУ** *к.* Дуңҡ-дуңҡ иттереү, дуңҡ-дуңҡ килтереү. *Егет ҡала ҡапҡаларын [балта, сүкеш менән] дуңҡылдатып һуғып йөрөгән була* (Әкиәттән).

**ДУНҠЫЛДАУ** *к.* Дуңҡ-дуңҡ итеү, дуңҡ-дуңҡ килеү.

**ДУНҠЫРАҠ** *и. диал.* Дуңғырлаҡ.

**ДУП: дупҡа һуғыу** *ҡар.* **дуплау.** *Склад мөдире дупҡа һуҡҡан ҡара тунлы кеше [икән].* Ә. Вәли.

**ДУПЛАНЫУ** *к. төш. ҡар.* **дуплау.** *Дупланған тире.*

**ДУПЛАТЫУ** *к. йөкм. ҡар.* **дуплау.** *Тирене дуплатыу.*

**ДУПЛАУ** *к.* Тирене махсус шыйыҡсаға һалып иләү. *Тире дуплау.*

**ДУПЛАУСЫ** *и. һөйл.* Тире иләүсе.

**ДУПЛЫ** *с. һөйл.* Дупҡа һуғылған; иләнгән. *Дуплы тун.*

**ДУР** *с. диал.* Ҙур. *Дур өй. Дур ҡала.*

**ДУРАЙЫУ** *к. диал.* Ҙурайыу. *Дурайып үҫеп киткән. Балалар дурая.*

**ДУРА́К** [*рус.*] *и. һөйл.* Ахмаҡ, иҫәр.

**ДУРАКЛАНЫУ** *к. һөйл.* Ахмаҡланыу, иҫәрләнеү. *Ул Ләбиб, ҡыҙғылт егет, .. йөрөй торғандыр инде фәс кейеп, дураҡланып.* Ш. Бабич.

**ДУРБА** *и. диал.* Турба.

**ДУРЫЯ** *и. диал.* Имән сәтләүеге.

**ДУСАР** [*фарс.*] *с.* Ниндәйҙер бер хәлгә төшкән, юлыҡҡан. *Бәхетһеҙлеккә дусар кеше.* ■ *Мин дусармын мең язаға.* Н. Нәжми.

□ **Дусар булыу 1)** ниндәйҙер бер хәлгә юлығыу. *Айырылышыуға дусар булыу. Ауырлыҡҡа дусар булыу. Бәләгә дусар булыу. Мәшәҡәткә дусар булыу.* ■ *Ата-бабаларым дусар булған аслыҡҡа.* А. Игебаев; 2) кемгәлер юлығыу, йөҙгә-йөҙ килеү, осрау. *Һыу алып торған бер әбейгә дусар булдыҡ.* С. Кулибай. **Дусар итеү** 1) ниндәйҙер бер хәлгә юлыҡтырыу.— *Ҡуй инде, аллаһы тәғәлә батша хеҙмәтенә дусар итмәһен инде әҙәм балаһын.* Ғ. Ғүмәр; 2) кемгәлер юлыҡтырыу, осратыу.

**ДУСТ** [*рус.* ⟨ *ингл.*] *и.* Дезинсекция яһау өсөн ҡулланылған онтаҡ химик матдә. *Дуст һибеү.*

**ДУҪ** [*фарс.*] *и.* **1.** Дуҫлыҡ мөнәсәбәттәре менән бәйле, изге теләкле кеше, яҡын иптәш; киреһе дошман. *Иҫке дуҫ. Йәшлек дуҫы. Ҡәҙерле дуҫ. Һөйөклө дуҫ. Ысын дуҫ. Яҡын дуҫ. Дуҫ булыу. Дуҫ булышыу. Дуҫ итеү. Дуҫ күреү.* ■ *Вәлишин Мәскәүҙән ҡайтышлай Өфөгә тейҙе, дуҫтары янына.* Ғ. Сәләм. *Дуҫтар менән ғүмер — яҡты баҡса, һүнмәҫлек дәрт бирә йәшәүең.* Р. Ғәрипов. *Яҡын күргән дуҫтан яманы юҡ ауыр саҡта һиңә ят булһа.* (Халыҡ йырынан). / Шул кешегә өндәшеү һүҙе. *Иптәшем: — Йә әле, дуҫ, һинең йәш сағыңда күргән ҡыҙыҡтарың барҙыр, һөйлә әле,.. тине.* Т. Йәнәби. *Дуҫтарым, торған ерегеҙ тыуған ауыл, киң ауыл,.. тын ауыл.* Ш. Бабич. *Һай күңелле, дуҫтар, был айҙа, күҙ сағылып*

*ята туғайҙа.* Ғ. Амантай. / Яҡын күргән, яратҡан, күңелгә оҡшаған нәмә. *Йәйем минең — гөлдәр баҡсаһы, мин гөлдәрҙең дуҫы — һаҡсыһы.* Ғ. Амантай. *Дуҫтарым ҡыҙыл флаг, ҙур сүкеш менән урак!* Ғ. Мәсғүт. *Дошман килеп ҡамағас, тирәмде ут ялмағас,.. дуҫ та булдың, Ҡурташым [тауым]* (Халыҡ йырынан). / Теләктәшлек итеүсе, бер яҡлы кешеләр, теләктәштәр. *Советтар Союзының дуҫы.* ■ *Дуҫтарын йыйған Бүгәсәү, дошманын ҡырған Бүгәсәү.* Салауат. **Йән дуҫ** үтә ҡәҙерле, иң яҡын кеше. *Йән дуҫтай күреү.* ■ *Был киммәтле комарҡты. Мин һиңә, йән дуҫыма, үҙ еремдән бүләк итеп алып килер өсөн ошонан да ҡәҙерлерәк нәмә тапманым,— тине Аҡбулат.* З. Биишева. **Сер дуҫ** сер һөйләшеп, күңелде бушата торған яҡын кеше. *Йондоҙҙар һәм ай — сер дуҫтарым, һандуғас, турғай — йырсы ҡоштарым.* Ш. Бабич.

**2.** *с. мәғ.* Бик яҡын, йылы мөнәсәбәтле, дуҫлыҡ хисе һаҡлаған. *Дуҫ егет. Дуҫ ҡыҙ. Дуҫ кеше. // Дуҫ күренеү. Дуҫ йәшәү.* ■ *Баяғы шәкерт минең дуҫ кеше ине, мин Зөләйха менән ике аралағы мөнәсәбәтте һөйләнем.* Т. Йәнәби.

**3.** *эйл. ф.* **дуҫҡай, дуҫҡайым** Дуҫ-ишкә яратып эйтелә. *Мин дә дуҫҡай, күбәләктәй йән күңелдән йәм һөйәм.* Ш. Бабич.

● *Айырылмаҫ дуҫыңа онотолмаҫ һүҙ әйтмә.* Әйтем. *Атаһы дуҫтың балаһы дуҫ.* Әйтем. *Ғәйепһеҙ дуҫ эҙләмә — таҡ ҡалырһың.* Әйтем. *Дуҫ бар, дошман бар.* Әйтем. *Дошманыңды һөйөндөрмә, дуҫыңды көйөндөрмә.* Әйтем. *Дуҫ менән дуҫ булғанға шатлан, дошман менән дуҫ булыуҙан һаҡлан.* Әйтем. *Кейемдең яңыһын, дуҫтың иҫкеһен маҡта.* Әйтем. *Сер дуҫы күп булыр, серҙе тотҡан бер булыр.* Әйтем. *Эттең дуҫы күп булыр, йәненә файҙаһы юҡ булыр.* Мәҡәл.

**ДУҪ-ДОШМАН** *и. йыйн.* Дуҫ һәм дуҫ булмаған кешеләр; төрлө халыҡ. *[Әсәһе — Ғәзизәгә:] Тыңла атаңдың һүҙен, дуҫ-дошманы араһында ҡыҙартма инде йөҙөн!* (Бәйеттән).

**ДУҪ-ИШ** *и. йыйн.* Дуҫтар, иптәштәр, яҡын күргән тиңдәштәр. *Дуҫ-иш булып йәшәү. Дуҫ-иш булыу. Дуҫ-иш итеү.* ■ *Мин ҡайтышлай Өфөгә һуғылып үттем. Унда беҙҙең дуҫ-иштәр етерлек икән әле. .. Шулар: .. ҡайғырма, Гәрәй дуҫ, ярҙам итербеҙ!..» тинеләр.* Б. Бикбай. *Дуҫ-иш кәрәк түгел гәйбәткә, кәрәк ауыр йә шат сәғәткә.* С. Кулибай.

**ДУҪЛАШТЫРЫУ** *к.* Үҙ-ара дуҫ итеү, дуҫлыҡ мөнәсәбәте урынлаштырыу. *Кешеләрҙе дуҫлаштырыу.* ■ *Бер коллективта оҙаҡ эшләү беҙҙе ныҡ дуҫлаштырҙы.*

**ДУҪЛАШЫУ** *к.* Үҙ-ара дуҫлыҡ мөнәсәбәтенә инеү, дуҫ булыу. *Дуҫлашып китеү. Дуҫлаша алмау.* ■ *Больницала Ғәйшә менән дуҫлаштыҡ. .. Кистәрен уның менән оҙаҡ һөйләшеп ултырабыҙ.* С. Агиш.

**ДУҪЛЫҠ** *и.* Дуҫтарға хас мөнәсәбәт. *Ысын дуҫлыҡ. Яҡын дуҫлыҡ. Социалистик илдәр дуҫлығы. Халыҡ-ара дуҫлыҡ. Дуҫлыҡ хисе.* ■ *Дуҫлыҡ ул ифрат та ҙур тойғо. Бер-береңә тоғро булғанда ғына ысын тормош һәм ныҡлы дуҫлыҡ булыуы мөмкин.* Ә. Әлибаев. .. *Рус һәм башҡорт дуҫлығын һүтелмәҫ итеп төйнәгән Салауат кеүек ир ҡайҙа?* Р. Ниғмәти.

**ДУҪТАРСА** *р.* Дуҫтарға хас, дуҫтар кеүек, дуҫ булып. *Дуҫтарса йәшәү. Дуҫтарса хат алышыу. Дуҫтарса осрашыу.* ■ .. *Беҙ дуҫтарса оҙаҡ һөйләштек.* Ғ. Сәләм.

**ДУТА́Р** [*фарс.*] *и.* Сиртеп уйнай торған ике ҡыллы, оҙон тотҡалы музыка ҡоралы (таджик, үзбәк, төркмән һ. б. халыҡтарҙа бар). *Дутар уйнау. Дутарға бейеү.*

**ДУХО́ВКА** [*рус.*] *и.* Аҙыҡты эҫе һауа ярҙамында бешереү өсөн плитә эсендә тимер ҡумта һымаҡ итеп яһалған мейес. *Духовкала бешереү. Духовкала быҡтырыу.*

**ДУХТЫР** [*рус.* доктор] *и. иҫк. һөйл.* Доктор, врач.

**ДУШ** [1] [*рус.* ⟨ *фр.*] *и.* **1.** Һыу һиптертеп ҡойона торған ҡулайлама. *Душ бүлмәһе. Душты ремонтлау.* / Шул ҡулайлама менән йыуына торған урын. *Душҡа инеү. Душта йыуыныу.*

**2.** Тәнгә һыу һиптереп дауалай торған гигиена һәм һыу дауаһы процедураһы. *Душ алыу. Шарко душы.*

**ДУШ** [2] [*рус.* душа] *и. тар.* **1.** *кар.* **йән** 3. *Ғаиләлә биш душ. Душ башына бүлеү.* ■ *Заводсылар .. һәр мең бот баҡыр сығарыу өсөн илле душ крәҫтиән һатып алалар.* Ғ. Фәхретдинов.

**2.** Ер бүлгәндә өлөш сығарыу өсөн иҫәпкә алынған ир кешеләр һаны. *Душҡа тейгән ер.* / Шул йән башына тейгән ер өлөшө. *Бер душ ер.* ■ *[Хәбир:] Мин ярты душ ер көтәм. Ә ана .. кешеләр өсәр дүртәр душ ер биләй.* М. Ғафури.

**3.** Йән башына һалынған яһаҡ. *Ә шулай ҙа эштәр насар беҙҙең, былай булһа, аҫҡа үлербеҙ. .. Ысынлап та, нимә ашарбыҙ беҙ, нимә менән душты түләрбеҙ.* Х. Ҡунаҡбай.

**ДУШЕВО́Й** [*рус.*] *с. иҫк. һөйл.* Душ [2] (2 мәғ.) башына бүленгән. *Душевой ер.* **Душевой надел** революцияға тиклемге Россияла крәҫтиәндәргә (ир-атҡа) йән башынан бирелгән ер. *Мырҙаш атаһынан ҡалған ике душевой надел ерен биш йөҙ һумға һат[а].* Д. Юлтый.

**ДУШНАМ** [*фарс.*] *и. иҫк.* Әрләшеү, һүгенеү, ерәнгес һүҙҙәре.

**ДУШТАНЫУ** *к. диал.* Шәре сығыу, шәреләнеү.

**ДУЭ́ЛЬ** [*рус.* ⟨ *фр.*] *и.* Алдан билдәләнгән шарт менән ике кеше (рәнйетелеүсе менән рәнйетеүсе) араһында үткәрелгән ҡораллы көрәш, алыш. *Дуэлгә сығыу. Дуэлдә атышыу.* / *күсм.* Ике аралағы алыш, көрәш. *Дошман артиллеристары үҙҙәренең ут көсөн ҡыйыу расчет өҫтөнә йүнәлдерҙе. Ҡаты артиллерия дуэле башланды.* Ә. Ихсан.

**ДУЭ́Т** [*рус.* ⟨ *ит.*] *и.* **1.** Ике музыка ҡоралы йәки ике йырсы башҡарыу өсөн һәр береһенә айырым партия менән яҙылған музыкаль әҫәр. *Ҡурайҙан дуэт, трио һәм квартет төҙөп була.* Ғ. Бирҙин.

**2.** *муз.* Ике башҡарыусынан (йырсы йәки музыканттан) торған ансамбль.

**ДҮБӘНЕҮ** *к. диал.* Йыуаныу. *Илай-һыҡтай һөйләп дүбәнергә ҡалды инде һөйләшкән телдәре* (Бәйеттән).

**ДҮДӘРДӘН** *и. диал.* һеҙһеҙ.

**ДҮМ** *и. диал. кар.* **ҡурғаш** 2.

**ДҮМЕРСӘК** *и. диал. кар.* **түмәр** 1.

**ДҮМҺӘ** *и. диал.* Түңгәк. *Балтаны дүмһәгә сабыу.* ■ *Дүмһә өҫтөндә ултырған Моталлап әкрен генә урынынан тор[ҙо].* Р. Низамов.

**ДҮМҺӘЙ** *и. диал.* Ҡалҡыу ер, уба. *Урта бер урындағы дүмһәйгә табан артыҡ ныҡ тапалмаған һуҡмаҡ китә ине.* Ғ. Ибраһимов.

**ДҮМӘЛӘС** *и. диал.* Түбә, ҡалҡыу. .. *Ат .. дүмәләс башына һалынған ел тирмәне арьяғындағы типһенгә ҡарай ыңғайланы.* И. Көҫәпҡол.

**ДҮН** [*фарс.*] *и. иҫк.* Аҫҡы яҡ, кире яҡ. / Түбәнлек, бысраҡлыҡ. *Илаһым, күңелемде донъяи дүнгә ебәрмә.* М. Өмөтбаев.

● *Үнәре үргә тарта, арт һаны дүнгә тарта.* Мәҡәл.

**ДҮНДЕРЕҮ** *к.* **1.** Ниндәйҙер бер хәлгә килтереп төшөрөү, нимәгәлер килтереү. *[Талип:] Мин бер кафирәне ислам диненә дүндерҙем.* М. Кәрим. *[Йәмилә — Мөхәмәтгәлигә:] Ауылды бер хәлгә дүндерәһең һин ошо ҡылығың менән.* Ф. Иҫәнғолов.

**2.** Билдәле бер ниәттән, фекерҙән баш тарттырыу; кире ҡайтартыу; ҡайтауыллатыу. *Кире дүндереү.* ■ *Был һүҙ мине ҡасып ҡайтыу уйынан бөтөнләй дүндерҙе. Мин түҙергә булдым.* З. Бишева. **Йөҙ дүндереү** нимәнәндер ситләшеү, ваз кисеү. *Халыҡ унан йөҙ дүндерҙе.*

**ДҮНЕҮ** *к.* **1.** Ниндәйҙер хәлгә ҡалыу, нимәгәлер юлығыу. *[Гөлгәйшә:] Мин Моталлап ағайың өсөн борсолам. Дыулап йөрөй торғас, берәр хәлгә дүнеп ҡуймаһа ярар ине.* М. Хәйҙәров.

**2.** Ниәт, фекерҙән баш тартыу, кире ҡайтыу; ҡайтауыллау. *Ниәттән дүнеү. Һүҙҙән дүнеү.* ■ *Төҙәлеүҙе өмөт итә торған инем. Булмай икән! Ул фекерҙән инде дүндем.* М. Ғафури.

**ДҮНӘЖЕН** *и.*, **дүнәжен байтал** Өс менән дүрт йәш араһындағы бейә малы. *[Алһыу] йәш шул әле, дүнәжен кәүек дыуамал сағы.* Ғ. Ибраһимов.

**ДҮНӘН** *и.* **1.** (*йәки* **дүнән айғыр**) Өс йәш менән дүрт йәш араһындағы айғыр малы. *Алма сыбар дүнән. Буҙ дүнән.* ■ *Заятүләктең бакталы дүнәнгә менеүе була, ул күк толпарға әйләнә.* «Заятүләк менән Һыуһылыу». *Өйөрҙә йөрөгән күк дүнәнде тотоп ҡына бирсе атай .. елеп тә генә үтәйем* (Сеңләүҙән).

**2.** (*йәки* **дүнән үгеҙ**) Өс йәш менән дүрт йәш араһындағы үгеҙ малы.

**ДҮҢГӘК** *и. диал.* Түңгәк. *Хисмәтулла .. серек ҡайын дүңгәге эргәһенә барҙы.* Я. Хамматов.

**ДҮҢГӘЛӘК** *и.* **1.** Түңәрәкләп ике осо тоташтырылған йомро тимер; ҡулса. *Сынйыр дүңгәләге. Дүңгәләк кейҙереү.* ■ *Тирмә эсендәге бер нәмәгә күҙем төштө. Был нәмә башҡорттарҙың боронғо һуғыш кейеме ине. Ул тотош ҡорос дүңгәләктәрҙән ҡоршап яһалған* (Хикәйәттән). / *диал.* Дуға башындағы түңәрәк тимер; сыңға. / *диал.* Мурҙа эсенә бөгөп ҡуйылған тал.

**2.** Шуға оҡшаш һәр төрлө түңәрәк нәмәләр. *Түп-түңәрәк дүңгәләк. Төтөн дүңгәләктәре. Дүңгәләк һымаҡ. Дүңгәләк итеү.* ■ *Ара-тирә балыҡ ҡарпыуынан йылға өҫтөнә эреле-ваҡлы дүңгәләктәр йәйелә.* Ф. Иҫәнғолов.

**ДҮҢГӘЛӘКЛӘНЕҮ** *к.* Дүңгәләк һымаҡ түңәрәк булыу, дүңгәләк яһау. *Фонарь яҡтыһы дүңгәләкләнеп төшкән урында Аҡсәсәк ҡапыл туҡтаны.* Б. Бикбай.

**ДҮҢГӘЛӘКЛӘҮ** *к.* Түңәрәк эсенә алыу. *Дүңгәләкләп ҡамап алыу.*

**ДҮҢГӘЛӘҮ** *к. диал.* Тәгәрәү.

**ДҮҢГӘҮЕР** [1] *и. кар.* **түңгәүер.**

**ДҮҢГӘҮЕР** [2] *с. диал.* Ҙур.

**ДҮПӘЛӘМ** *р. диал.* Өймәләм. *Дүпәләм итеп түлтырыу.*

**ДҮРТ** *төп һ.* **1.** 4 һаны. *Дүрт йөҙ. Ун дүрт.* / Кем йәки нәмәнеңдер 4-кә тиң иҫәбе. *Дүрт кеше. Дүрт көн. Дүрт мөйөш. Дүрт сәғәт.* ■ *Минең кеҫәлә дүрт кенә һум аҡса бар.* Т. Йәнәби.

**2.** *и. мәғ.* Биш баллы баһа системаһындағы яҡшы» билдәһе. *Дүрт алыу. Дүрткә уҡыу.*

◆ **Дүрт күҙ менән көтөү** түҙемһеҙләнеп, бик ныҡ көтөү. *Сөнәгәт ҡайтманы. Салиха уны .. аҙарынып, дүрт күҙ менән көтөп йөрөнө.* Ж. Кейекбаев. **Дүрт мөйөш** *кар.* **мөйөш** 6. **Дүрт тағанлау** (*йәки* **аяҡлау**) имгәкләү. **Дүрт һаны теүәл** (*йәки* **һау**) аяҡ-ҡулы иҫән. **Дүрт яғың ҡибла** «үҙ иркеңдәһең, ни теләһәң шуны эшләргә мөмкин» тигән мәғәнәлә ҡулланыла. *[Сәлих ҡыҙҙарға:] .. әлек йырлағыҙ, унан һуң инде дүрт яғығыҙ ҡибла, теләгән ерегеҙгә осорһоғоҙ.* Х. Ибраһимов. **[Ике] күҙ дүрт булыу** үтә ныҡ аптырауҙы белдерә. *Әйәрле ярһыу аттарға атланып егермеләп һыбайлы майҙан уртаһына килеп инеүгә беҙҙең ике күҙебеҙ дүрт булды.* Н. Иҙелбай.

**ДҮРТЕНСЕ** *рәт һ.* Урын тәртибе 4 менән билдәләнгән. *Дүртенсе тапҡыр. Дүртенсе йыл. Дүртенсе класс.* ■ *Беҙ дүртенсе ротаға ниндәй приказ бирелеүен тыңлайбыҙ.* Д. Юлтый.

**ДҮРТЕШӘР** *бүл. һ.* Һәр бере дүрткә тиң, дүрттән торған, дүрткә тиң. *Дүртешәр һум. Дүртешәр кеше. Дүртешәр мәртәбә.*

**ДҮРТКЕЛ** *с.* **1.** Дүрт яғы бер тигеҙ. *Дүрткел шәл. Дүрткел балаҫ. Дүрткел яулыҡ. Дүрткел булыу. Дүрткел итеү.* ■ *Ашхана мөдиренең кабинеты — бер тәҙрәле бәләкәй генә дүрткел бүлмә.* Н. Иҙелбай.

**2.** *и. мәғ.* Дүрт яғы бер тигеҙ геометрик фигура; квадрат.

**ДҮРТКЕЛЛӘҮ** *к.* Дүрткел итеү. *Дүрткелләп һыҙыу. Дүрткелләп яһау.* ■ *[Ашҡа] аппаҡ ондан дүрткелләп, шаҡмаҡлап ҡырҡылған һалма һалынған.* Т. Хәйбуллин.

**ДҮРТЛЕ** *с.* Үлсәме дүрт берәмеккә тиң. *Дүртле калуш. Дүртле номер.*

**ДҮРТМӨЙӨШ** *и.* Дүрт мөйөшлө геометрик фигура.

**ДҮРТМӨЙӨШЛӘҮ** *к.* Дүрт мөйөшлө итеү. *Дүртмөйөшләп ҡырҡыу. Дүрт мөйөшләп ҡумта яһау.*

**ДҮРТҺАН** *с.* Тәбәнәгерәк буйлы, киң күкрәкле, ныҡ көслө кешегә ҡарата; мыҡты. *Ул [Бейеш кантон] бик баһадир, дүртһан булғанға менгән аты бер аҙнаға ла сыҙамаған* (Хикәйәттән).

**ДҮРТӘРЛӘП** *р.* Дүртәр итеп, дүрте бергә, дүртәрҙән. *Дүртәрләп бүлеү. Дүртәрләп теҙеләү.*

**ДҮРТӘҮ** *йыйн. һ.* Дүрт кеше йәки нәмә. *Хәҙер бер өйҙә дүртәү торабыҙ.* Д. Юлтый.

**ДҮРТӘҮЛӘП** *р.* Дүрт кеше бергә.— *Таубатыр, Урманбатыр, йәнә Уғатарбатыр — дүртәү-*

*ләп донъя кыҙырып йөрөп ятабыҙ,— тип яуап биргән Аҡъялбатыр* (Әкиәттән).

**ДҮРТӘҮЛӘШЕП** *р.* Дүрт кеше бергәләшеп, дүрт кеше бергә. *Улар [Айбулат, Истебай, Вася], Марусяның ваҡыты булған саҡ булһа, дүртәүләшеп күңел асырға китәләр.* Һ. Дәүләтшина.

**ДҮҪМӘТТӘЙ** *с. диал.* Ҙур кәүҙәле, уҫлаптай. *Дүҫмәттәй бала.*

**ДҮШӘМБЕ** [*фарс.*] *и.* Аҙнаның беренсе көнө, йәкшәмбенән һуңғы, шишәмбенән алдағы көн. *Үткән дүшәмбе.* ■ *Дүшәмбе көн иртә менән сығып киттек қаланан* (Бәйеттән).

**ДЫҒАЛ** *с.* **1.** Буйсан, ҙур кәүҙәле. *Дығал кеше.* ■ *Дығал егет лейтенант Аннаклыч Атаев һүҙ һораны.* Ә. Ихсан.

**2.** *күсм.* Мөлкәтле, күренекле. // *Этколдоң коҙаһы .. калынға килгәндә, үҙ ауылының дығалдарынан, байҙарынан ун һигеҙ саналыҡ коҙа-коҙағый алып килде.* Ғ. Дәүләтшин.

**ДЫҒЫР** *окш.* Тигеҙ булмаған киртмәсле ҡаты нәмәгә икенсе нәмә ышҡылғанда сыҡҡан тауышты белдергән һүҙ. *Дығыр итеү.*

**ДЫҒЫР-ДЫҒЫР** *окш.* Ҡабат-ҡабат дығыр иткән тауышты белдергән һүҙ. *Ҡул тирмәне менән дығыр-дығыр муйыл тарталар.*

**ДЫҒЫРЛАТЫУ** *к.* Дығыр-дығыр иттереү, дығыр-дығыр килтереү. *[Тимербулат] кул тирмәне янына тубыкланып ултырып, дығырлатып бойҙай тарта.* Һ. Дәүләтшина.

**ДЫҒЫРЛАУ** *к.* Дығыр-дығыр итеү, дығыр-дығыр килеү.

**ДЫМ** *и.* Нимәгәлер әҙ генә һеңешкән һыу; быу; еүешлек. *Тупраҡ дымы. Дым тартыу.* **Дым ҡаплау** көҙҙән һөрөлгән ерҙе яҙ көнө өҫтән тырматып сығыу. **Дым һыйышы** дым һеңдереү һәләте. *Тупраҡтың дым һыйышы.*

**ДЫМБАУ** *с. диал.* Дымһыл. *Дымбау ашлыҡ. Дымбау көн.*

**ДЫМҒАҘАУ** *к. диал.* Дымланыу.

**ДЫМҠЫЛ** *с. диал.* Дымһыл.

**ДЫМЛАНДЫРЫУ** *к.* Дым һеңдереү, дымлы итеү. *Дымландыра биреү. Дымландырып бөтөү. Ямғырҙар йылдың йылы айҙарында ғына яуа, ул да тупраҡты аҙ дымландыра.*

**ДЫМЛАНЫУ** *к.* **1.** Дым һеңеү, дымлы булыу. *Иген дымлана. Кейем дымлана. Ямғыр яуыр алдан тоҙ дымлана* (Һынамыштан).

**2.** Еүешләнеү, һыуланыу. *Сәрбиямал әбейҙең күҙҙәре дымланды.* Ғ. Лоҡманов.

**ДЫМЛАУ** *к.* Дым һеңдереү, дымлы итеү. *Орлокто дымлау.*

**ДЫМЛЫ** *с.* Дымланған, еүеш. *Дымлы ашлыҡ. Дымлы тупраҡ. Дымлы һауа. Дымлы булыу.* ■ *Яҙ етте. Уның йылы, дымлы һулышы бөтә ерҙә лә тойола.* Ә. Вәли.

**ДЫМЛЫҠ** *кар.* **дымлылыҡ.**

**ДЫМЛЫЛЫҠ** *и.* Нимәнеңдер дымлы булыу, нимәләлер дым булыу кимәле. *Абсолют дымлылыҡ. Тупраҡтың дымлылығы. Һауаның дымлылығы. Дымлылыҡ үлсәүесе. Орлоҡтоң дымлылығы.*

**ДЫМП** *окш.* Ҡаты нәмәгә тос нәмә менән һуҡҡанда сыҡҡан тауышты белдергән һүҙ. *Дымп итеү.*

**ДЫМП-ДЫМП** *окш.* Ҡабат-ҡабат дымп иткән тауышты белдергән һүҙ. *Дымп-дымп итеү. Дымп-дымп килеү.*

**ДЫМПЫЛДАТЫУ** *к.* Дымп-дымп иттереү, дымп-дымп килтереү. *Дымпылдата баҫыу.*

**ДЫМПЫЛДАУ** *к.* Дымп-дымп итеү, дымп-дымп килеү.

**ДЫМҺЫЙЫМ** *и. шул уҡ* **дым һыйышы** (*кар.* **дым**).

**ДЫМҺЫЛ** *с. кар.* **дымһыу.** *Дымһыл һауа.*

**ДЫМҺЫУ** *с.* Әҙерәк еүеш, бер аҙ дымлы. *Дымһыу ашлыҡ. Дымһыу тупраҡ.* ■ *Кистең дымһыу тыны бәрелгәндәй булғас, ул юрғанын [япты].* Һ. Дәүләтшина. *Тышта көҙ һәм ямғыр тамсылап тороуға ҡарамаҫтан, кемдер клуб тәҙрәһен асып ебәрҙе. Залға дымһыу һауа бөркөлдө.* М. Бикбай.

**ДЫМҺЫУЛАНЫУ** *к.* Әҙ генә дымланыу.

**ДЫМЫЙ** *ымл. диал.* Атаҡ, бәй. *Дымый, нишләп һыйырыңды көтөүгә ебәрмәнең?*

**ДЫҢ** *окш.* Тимер һ. б. һуҡҡанда сыҡҡан яңғырауыҡлы ҡалын тауышты белдергән һүҙ. *Дың итеү.*

**ДЫҢҒЫЛ** *окш.* Тимер-томор һымаҡ ҡаты нәмәгә ҡағылып-һуғылғанда сыҡҡан тауышты белдергән һүҙ. *Дыңғыл итеү.*

**ДЫҢҒЫЛДАТЫУ** *к.* Дыңғыл-дыңғыл иттереү, дыңғылдатып ҡағыу. *Дыңғылдатып һуғыу.* ■ *[Рәхимә] һандыкты дыңғылдатып асып,.. Хаяттың һаҡалын сығарып бирҙе.* Һ. Дәүләтшина.

**ДЫҢҒЫЛДАУ** *к.* Дыңғыл-дыңғыл итеү, дыңғыл-дыңғыл килеү. *Һикәлтәләрҙә сананың дыңғылдап бер түбән төшөүе, бер юғары күтәрелеүе уның [Рәйсәнең] йәрәхәтен ауырттыра.* Х. Мохтар.

**ДЫҢҒЫЛ-ДЫҢҒЫЛ** *окш.* Ҡабат-ҡабат дыңғыл иткән тауышты белдергән һүҙ. *Дыңғыл-дыңғыл итеү. Дыңғыл-дыңғыл килеү.*

**ДЫҢҒЫР** *окш.* Ҡаты нәмәләр ҡағылып-һуғылғанда сыҡҡан тауышты белдергән һүҙ. *Дыңғыр-дыңғыр итеү. Дыңғыр-дыңғыр килеү. Мискәләр дыңғыр-дыңғыр тәгәрәй.*

**ДЫҢҒЫРҘАТЫУ** *к. диал.* Дыңғырлатыу. *Мин нәҙек оҙон кәртә ағасын дыңғырҙатып һөйрәтеп, ауыл осона киттем.* С. Кулибай.

**ДЫҢҒЫРЛАТЫУ** *к.* Дыңғыр-дыңғыр иттереү, дыңғыр-дыңғыр килтереү. *[Мөхәмәҙиә:] Аты шәп, етеҙ. Таш юл менән дыңғырлатып китеп барабыҙ бер ваҡыт.* Ж. Кейекбаев.

**ДЫҢҒЫРЛАУ** *к.* Дыңғыр-дыңғыр итеү, дыңғыр-дыңғыр килеү. *[Нигмәтулла] ағасты ярып төшәгән солан иҙәненән үткәндә биҙрә эсендәге ижау дыңғырлап ҡалды.* Я. Хамматов.

**ДЫҢ-ДЫҢ** *окш.* Ҡабат-ҡабат дың иткән тауышты белдергән һүҙ. *Дың-дың-дың итеп, күрше бүлмәләге сәғәттең алтыны һуҡҡаны ишетелде.* Ш. Шәһәр.

**ДЫҢҠ** *окш.* Ҡаты нәмәгә тос нәмә менән һуҡҡанда сыҡҡан тауышты белдергән һүҙ. *Дыңҡ итеү.* ■ *Таштимер шкафтың аҫҡы өлөшөн ҡосаҡлап күтәреп алды ла, ҡаҡ арбаға дыңҡ иттереп ултыртты.* Р. Солтангәрәев.

**ДЫҢҠ-ДЫҢҠ** *окш.* Ҡабат-ҡабат дыңҡ иткән тауышты белдергән һүҙ. *Дыңҡ-дыңҡ итеү. Дыңҡ-дыңҡ килеү.*

**ДЫҢҠЫЛДАТЫУ** *к.* Дыңҡ иттереү, дыңҡ-дыңҡ килтереү. *Ғәмбәров машинаһынан төштө лә.., дүрт тәгәрмәсте лә дыңҡылдата тибеп тикшереп сыҡты.* Ш. Янбаев.

**ДЫҢҠЫЛДАУ** *к.* Дыңҡ итеү, дыңҡ-дыңҡ итеү, дыңҡ-дыңҡ килеү. *Ауыр кәүҙәле Хәлимә ергә баҫҡанда, ер дыңҡылдаған төҫлө була.* Ғ. Ғүмәр.

**ДЫР** [1]: **дыр ҡамсы** эсенә ҡурғаш ҡуйып үрелгән ҡамсы.

**ДЫР** [2] *окш.* Ҡалтырап сыҡҡан тауышты белдергән һүҙ. *Дыр итеү.*

♦ **Дыр әйләнеү** көслө, туҡтауһыҙ әйләнеү.

**ДЫР-ДЫР** *окш.* Оҙаҡ дыр иткән тауышты белдергән һүҙ. *Дыр-дыр итеү. Дыр-дыр әйләнеп тороу.*

**ДЫРЛАТЫУ** *к.* Дыр-дыр иттереү, дыр-дыр килтереү. *Тракторҙы дырлатыу.*

**ДЫРЛАУ** *к.* Дыр-дыр итеү, дыр-дыр килеү. *Тау артынан дырлап килеп сыҡҡан «Виллис» контора алдына ҡайтып туҡтаны.* Т. Арслан.

**ДЫРЫЛДАТЫУ** *к.* Дыр-дыр иттереү. *[Мазһар] гармунын дырылдата.* С. Кулибай.

**ДЫРЫЛДАУ** *к.* Дыр-дыр итеү, дыр-дыр килеү. *Машина дырылдай.*

**ДЫУ** *окш.* **1.** Күмәк шау-шыу тауышты белдергән һүҙ. *Дыу итеү. Дыу килеү. Дыу килтереү. Дыу ҡуптарыу. Дыу килтереп эҙләү.* ■ *Шәрифә пианино уйнай. Бейеү, йыр ... Өй эсе дыу килә.* Б. Хәсән. *Ҡайҙа барма — Хажисолтан байҙың көтөүе. Һыйырыңды, кәзәңде бер ергә сығарһаң да бай дыу килә.* Я. Хамматов. *[Вәли—Сафаға:] Канторҙа һине дыу килтереп эҙләйҙәр.* И. Ниғмәтуллин.

**2.** *күсм.* Күтәренке рух, дәрт менән нимәлер эшләүҙе белдереп әйтелә. *Донъяны дыу килтереү. Дыу булыу. Дыу килеп уйнау. Дыу килеп шаярыу.* ■ *Революция төрлө синыфҡа төрлөсә тәьҫир итте. .. Һәр ерҙә йыйылыш, митинг, булған ваҡиғалар тураһында һүҙҙәр һөйләнә. Алҡыштар ... Халыҡтың рухы күтәренке, дыу киләләр.* З. Шәрҡи. *Дыу килтереп туй уҙған, ҡыҙға Шүлгән ир булған.* «Урал батыр». *Ҡыҙ менән егет дыу килтереп донъя көтөп тора, ти* (Әкиәттән).

**3.** *күсм.* Туҡтауһыҙ һыҙып ауыртҡанды белдереп әйтелә. *Аяҡтарым дыу килеп һыҙлай.*

**ДЫУАҘАҠ** *и. диал.* Туғаҙаҡ. *Дыуаҙаҡ ҡаҙҙай яңғыҙ ҡалыу.*

**ДЫУАЛҒЫ** *и. диал.* Тубылғы.

**ДЫУАМАЛ** *с.* Күп уйлап тормай, ҡыҙыулыҡ менән эш итеүсән; тоторокһоҙ, еңел холкло. *Дыуамал кеше. Дыуамал булыу.* ■ *— Һин бик дыуамалһың. .. Дыуамал баштан эш эшләмә, бәлә килтерер.* Ә. Вахитов. *Ҡаратай ауылының Мырҙаш исемле купецы — кеше маҡтаһа, кәпәреп, эреләнеп китә торған еңел тәбиғәтле, дыуамал кеше.* Д. Юлтый.

**ДЫУАМАЛЛАНЫУ** *к.* Дыуамаллыҡ күрһәтеү, дыуамал ҡыланыу, дыуамал булыу. *Дыуамалланыу гәҙәте.* ■ *[Ҡолсобай] Хисмәтулланы тыңламай отрядтан айырылыуына, дыуамалланып Кәжәнгә барыуына үкенде.* Я. Хамматов. *Айыу — аҡыллы йыртҡыс. Әммә юҡҡа-барға асыуына тейһәң, холко боҙолоп китә, дыуамаллана башлай.* С. Кулибай.

**ДЫУАМАЛЛЫҠ** *и.* Дыуамал кешегә хас сифаттар, аҡылһыҙ тәүәкәллек, еңел холоҡлолоҡ. *[Камалов:] Мин ныҡлап әйтергә тейешмен, Сәғиҙуллинға дыуамаллығын, ҡыҙыулығын ташларға кәрәк. Ундай башбаштаҡлыҡ беҙгә ярҙам итмәй.* А. Карнай.

**ДЫУАМАЛЛЫЛЫҠ** *и. ҡар.* **дыуамаллыҡ.**

**ДЫУАН** *и.* Бер башҡорт ырыуының исеме.

**ДЫУБИРМӘ** *с. диал.* Дыуамал.

**ДЫУ-ҒӘЛӘМӘТ** *и.* Төрлө шау-шыу, шау-гөр, күмәк шаулаған тауыштар; дыу-әкәмәт. **Дыу-ғәләмәт булыу** (*йәки* **килеү**) төрлө шау-шыу тауыштар сығарыу, күмәкләшеп шаулашыу. *Йомаҡ өйөшөп, көләмәс һөйләшеп, дыу-ғәләмәт булып бөттөк.*

**ДЫУЛАТЫУ** *к.* **1.** Дыу иттереү. *Бағаналарҙы дыулатып көслө ел өрә.*

**2.** *күсм.* Ҡыҙып-туҙып әрләү; дыу килтереү. *Дулатов, дыулатмағыҙ ҡаҙаҡты бик дөрләп китеп.* Ш. Бабич.

**3.** *күсм.* Бик шәп итеү. *Дыулатып туй яһау. Дыулатып донъя көтөү.*

**ДЫУЛАУ** *к.* **1.** Дыу итеү, дыу итеп шаулау; геүләү. *Ағас баштарында ел дыулай.*

**2.** *күсм.* Асыуланып ҡыҙып китеү; дыу килеү. *[Ҡолансәс:] Бикташ ағай алып китһә, .. китәм дә барам. Атайымдар дыулап әллә ҡайҙа бара алмаҫ әле.* Д. Юлтый.

**3.** *күсм.* Сәңгеп, һыҙып ауыртыу; һыҙлау. *Иртәнсәк аңына килгәс, Заһит күҙҙәрен аса алмай. Бөтә тәне дыулап һыҙлай.* Ә. Моратов.

**ДЫУЛАШЫУ** *к. урт. ҡар.* **дыулау** 1. *Жуликтарға шул һүҙ етә ҡалған. Улар һағыҙаҡ шикелле дыулаша башлаған.* М. Тажи.

**ДЫУЫЛДАТЫУ** *к. ҡар.* **дыулатыу.** *Дыуылдатып ҡыуып сығарыу.* ■ *Һары һаламдарҙы пыр туҙҙырып, дыуылдатып ашлыҡ һуғалар.* Ғ. Мәсғүт.

**ДЫУЫЛДАУ** *к. ҡар.* **дыулау.** *Көлтәләрҙән бушап ҡалған ас барабан дыуылдап әйләнә.* С. Агиш. *Фарт килмәһә, килмәй инде. Уның өсөн дыуылдауҙың файҙаһы юҡ.* Һ. Дәүләтшина.

**ДЫУЫЛДАШЫУ** *к. урт. ҡар.* **дыулашыу.**

**ДЫУ-ӘКӘМӘТ** *и. ҡар.* **дыу-ғәләмәт.** *Дыу-әкәмәт килеү. Өйҙә шулай дыу-әкәмәт килеп йырлап, шаулап ятҡан саҡта, тышта Ғаббас тауышы ишетелде.* И. Насыри. *Алексей шаян, шат егет ине, .. гитара уйнап, бейетеп, йырлатып, дыу-әкәмәт итеп бөтә торғайны.* З. Биишева.

**ДЫҺЫР** *окш.* Ниҙер һөйрәгәндә, тәгәрләткәндә сыҡҡан тауышты белдергән һүҙ. *Дыһыр итеү.*

**ДЫҺЫР-ДЫҺЫР** *окш.* Ҡабат-ҡабат, оҙаҡ дыһыр иткән тауышты белдергән һүҙ. *Дыһыр-дыһыр итеү. Дыһыр-дыһыр һөйрәү.* ■ *[Айбикәнең] тракторы тағы ла дыһыр-дыһыр итеп, киң яланға күк бензин төтөнөн һирпеп ебәрҙе.* Һ. Дәүләтшина.

**ДЫҺЫРЛАТЫУ** *к.* Дыһыр-дыһыр иттереү, дыһыр-дыһыр килтереү. *[Асатай] корогон ерҙә дыһырлатып һөйрәтеп, көтөүҙең йә уңына, йә һулына сабып сыға.* Һ. Дәүләтшина.

**ДЫҺЫРЛАУ** *к.* Дыһыр-дыһыр итеү, дыһыр итеп шаулау. *Трактор дыһырлай.*

**ДӘ**[1] *терк. кар.* **да**[1].

**ДӘ**[2] *киҫ. кар.* да[2].

**ДӘБАҺА** *киҫ. кар.* **дабаһа.**

**ДӘББӘТӨЛАРЗ** [*ғәр.*] *и. иҫк. кит.* Ожмахтағы эш малы. *[Сабир мулла:] Әле кисә генә дәббәтөларзды күрҙем. Бик ҙур шөкәтһеҙ нәмә икән. Ғәлиулла ломовойҙың корсаңгы күк аты бар ине. Бына тап шул инде.* Б. Ишемғол.

**ДӘБДӘБӘ** [*ғәр.*] *иҫк. кит.* **1.** *окш.* Тыпыр-тыпыр итеп сыккан тауышты белдергән һүҙ.

**2.** *и. күсм.* Шатлык, һөйөнөс. *Һиҙенә йәнем — һиндә кәгбәм, наҙлы, сазлы дәбдәбә.* Х. Ғәбитов.

**ДӘҒҮӘ** [*ғәр.*] *и.* **1.** *иҫк. юр.* Берәр нәмәгә хокуғың булыу тураһында белдереп куйған талап. *Дәгүә куйыу.*

**2.** Нимәгәләр карата белдерелгән кәтғи ризаһыҙлык, кәнәғәтһеҙлек. *Хәҙергә бер генә колхоз механигы ла дәгүә менән килгәне юк.* Р. Низамов.

**3.** Нимәгәләр карата көслө ынтылыш. *Эсендәге ханаһының игуаһында мал йыйып бик бай булыу дәгүәһендә* (Бәйеттән).

□ **Дәғүә итеү (йәки кылыу)** *кар.* **дәғүәләү.** *Мирсәйеттең улы Нурсәйет ханлык дәгүәһе кылды.* «Башкорт шәжәрәләре», 1960. *Әҙәм балалары тогролокка дәгүә кыла, ә эшләгән эштәре был дәгүәнең киреһе булып сыға.* М. Ғафури.

● *Кыҙ дәгүәһенә кергәнсә, кыҙыл эт дәгүәһенә кер.* Мәкәл.

**ДӘҒҮӘЛЕ** *с.* Талаш-тартышлы, бәхәсле. *Дәгүәле мәсьәлә.*

**ДӘҒҮӘЛӘҮ** *к.* **1.** *юр.* Нимәгәләр үҙ хокуғыңды белдереп судка мөрәжәғәт итеү.

**2.** Нимәгәләр карата кәтғи ризаһыҙлык белдереп, үҙ талабыңды куйыу. *Ер дәгүәләү. Мал дәгүәләү.* ■ *Дәүләт кыҙып-туҙып, Үмәр карттан түләгән мәһәрҙе, малды кире дәгүәләп ултыра ине.* Һ. Дәүләтшина.

**3.** Нимәгәләр көслө теләк белдереп ынтылыу. *Вазифа дәгүәләү.*

**ДӘҒҮӘЛӘШЕҮ** *к.* **1.** Үҙ-ара дәғүә куйып тартышыу. *Сабынлык өсөн дәгүәләшеү.* ■ *Дәгүәләшмә, егет, минең менән, бала-сагаң менән һатырмын* (Халык йырынан).

**2.** Нимәгәләр көслө теләк, ынтылыш белдереп көрәшеү. *Урын өсөн дәгүәләшеү.*

**ДӘҒҮӘСЕ** *и.* **1.** *иҫк. юр.* Дәғүә итеүсе, дәғүә итеп эш куҙғатыусы. *Буйһоноп, суд еренә килде Үгеҙ, дәгүәсе менән бергә торҙо тигеҙ.* М. Ғафури.

**2.** Дәғүә итеп теләк белдереүсе. *Дәгүәсе булыу.*

**ДӘҒҮӘСЕЛ** *с. һөйл.* Талаш, бәхәс куҙғатыусан. *Дәгүәсел кеше.*

**ДӘҒҮӘТ** [*ғәр.*] *и. иҫк.* **1.** Өндәмә. *Дәгүәт ебәреү.*

**2.** Доғалы кағыҙ; доғалык; дәүәт, бетеү. *Дәгүәт укыу.* ■ *Был һәләкәттән һине дәгүәтең генә коткарып калган.* «Алдар менән Зөһрә».

□ **Дәғүәт итеү** 1) сакырыу, өндәү; 2) кунакка сакырыу.

**ДӘҒҮӘТНАМӘ** [*ғәр.* ⟨ *фарс.*] *и. иҫк.* Сакырыу, өндәү кағыҙы; мөрәжәғәт хаты. *[Әмирхановтың] бер кулында — совет магазинының ышаныып биргән пломбиры, икенсе кулында — хосуси сауҙагәрҙәрҙе йыйырга иткән индәйҙер дәгүәтнамәһе.* С. Агиш.

**ДӘДӘҢ** *и. шаяр.* Һөйләшкәндә маһайған, мактанған булып, «мин индәй шәп!» тигән мәғәнәлә кулланыла. *Бер михнәттең, дуҫтар, бер рәхәте! Дәдәң хәҙер кыҙыл студент.* Ғ. Амантай.— *Бына күрҙеңме, дәдәңде нисек каршы алалар,— тине ялан батырҙарынан береү.* «Совет Башкортостаны», 1975, 15 октябрь.

◆ **Дәдәңде әйттереү** киҫәтеп, мәрхәмәт һоратыу (шаярып көрмәкләшкәндә, еңгән кеше: «Дәдәңде әйт!» — ти; еңелгән кеше: «Әйтәм, әйтәм!» — ти; шунан һуң ғына уны ебәрә).

**ДӘДӘҢЛӘТЕҮ** *к. һөйл.* «Дәдәңде әйт» тип ялбартыу; дәдәңде әйттереү.

**ДӘДӘҢЛӘҮ** *к. һөйл.* «Дәдәмде әйтәм» тип ялбарыу, ялыныу.

**ДӘЖЖӘЛ** [*ғәр.*] *и.* Дини хөрәфәт буйынса, киәмәт көнө алдынан сығып, бөтә халыкты эйәртеп алып китәсәк бер алдаксы зат. *Дәжжәл һымак халыкты которттоу. Дәжжәл кубыу.* ■ *Ҙур еҙ торбаларҙың тауышынан куркып, дәжжәл сыккан тип, кайһы бер карт-короләр бала-сагаларын тәҙрәнән каратмай, ишек бикләп куйгандар.* Ғ. Минһажев.

**ДӘЙН** *и. иҫк. кит.* Бурыс, бирәсәк. *Ошо дүрт нәмәне күрһәтмә беҙгә донъяла, я рабби: береһе фәкр, береһе дәйн, береһе мараз, береһе зиндан* (Бәйеттән).

**ДӘКАИК** [*ғәр.*] *и. иҫк. кит.* **1.** Кыҫка ғына вакыт араһы; минут.

**2.** Бәләкәй бөртөк, киҫәк. *Дәкаиктән мөшкөл сисеп калдырған ул, биш йөҙ йыллык батырҙарҙы талдырган ул.* Акмулла.

**ДӘКИКӘ** [*ғәр.*] *и. иҫк. кит.* **1.** Әҙ генә вакыт араһы; минут. *Мин донъяла ни кәҙәр золомдар .. күрһәм дә, ул золомдарҙы һинең мөхәббәтең, һин [Зәйнәп] һөйөклөмдөң бер дәкикә иҫемә төшөүе .. елгә осорҙо.* А. Таһиров. **Бер дәкикә эсендә** әҙ генә вакыт араһында.

**2.** Йылы уй, нескә фекер.

**ДӘЛ** *р.* Нәк, тап. *Тауҙың дәл түбәһе. Мәжлестең дәл уртаһы.* ■ *Вывеска дәл ишек өҫтөндә түгел, ишектән ситтәрәк, тәҙрә өҫтөндә ине.* Х. Мохтар.

□ **Дәл булыу** 1) тап-таман булыу. *Күлдәк дәл булды;* 2) юлда тура килеү, осрау; тап булыу. *[Куҙыйкүрпәс:] Өйөр ҙә өйөр малым калһа, ас бүреләргә дәл булһын, инәй.* «Куҙыйкүрпәс менән Маянһылыу». **Дәл итеү** юлда тура килтереү, осратыу, тап иттереү.

**ДӘЛ-ДӘЙ: дәл-дәй тороу (йәки баҫыу)** *диал.* ай-һай.

**ДӘЛЕГЕҮ** *к. диал.* Осрау. *Юлда дәлегеү. Урамда бер ят кешегә дәлектем.*

**ДӘЛЕКТЕРЕҮ** *к. диал.* Осратыу. *Силәбелә агас калак дәлектерҙем.*

**ДӘЛИЛ** [*ғәр.*] *и.* Берәй эш-хәлдә раҫлай, дөрөҫләй торған нигеҙ, фекер, фараз. *Дәлил булыу. Дәлил. килтереү. Дәлил табыу.* ■ *Азаматовтың фекере һәм дәлилдәре һис каршы килгеһеҙ асык, ышаныслы ине.* Ә. Вәли. *Кире каккыһыҙ индәй дәлилдәр менән раҫларга күңелдең был ауыр шиген?* З. Биишева.

**ДӘЛИЛЛӘҮ** *к.* Дәлил килтереү, дәлил менән раҫлау. *Фекерҙе дәлилләү. Һүҙҙе дәлилләү.*

**ДӘЛҮ** [*ғәр.*] *и.* **1.** *(баш хәреф менән) астр.* Ун ике бөрөждөң бере (Жәди һәм Хут бөрөждәре уртаһында урынлашҡан).

**2.** Ҡояш календары буйынса ун беренсе айҙың ғәрәпсә исеме (22 ғинуар — 21 февраль; *ҡар.* **календарь**).

**ДӘЛӘЛӘТ** [*ғәр.*] *и. иҫк.* Күрһәтмә, тәҡдим, өйрәтеү. *Дәләләт менән.* ■ *Ул [Дәүләтколов] ағай-эненең дәләләте буйынса, тирә-яҡ ауылдарҙа «уҡымышлы» исемен алған .. ҡыҙға өйләнергә мәжбүр булды.* Ғ. Рафиҡи.

□ **Дәләләт ҡылыу** тәҡдим итеү, күрһәтмә биреү. *Дин менән һеҙҙәрҙе алдағандар. Ожмахҡа керетәбеҙ, тип малдар йыйып, .. дәләләт ҡылғандар ялҡаулыҡҡа.* Д. Юлтый.

**ДӘМ** [1] [*фарс.*] *и. иҫк.* **1.** Һулыш, тын.

**2.** *күсм.* Һулыш алырлыҡ ҡына ҡыҫҡа ваҡыт, бер мәл. *Хәсрәт көйөң һәр дәм ҡолағымда гиҙә.* Б. Мирзанов.

□ **Дәм алыу** 1) һулыш алыу; 2) *күсм.* ял итеү. *[Батырша:] Хуп. Аттарыбыҙ әҙ-мәҙ дәм алһын да, китербеҙ.* Ғ. Ибраһимов.

**ДӘМ** [2] *и. диал. ҡар.* **тәм** [1].

□ **Дәм итеү** тәмләү. *Шәһбаздан ит дәм иткән бер таҙ.* Аҡмулла.

**ДӘН** *и. диал.* Тән.

**ДӘНИ** [*ғәр.*] *с. иҫк.* Түбән, әшәке; ҡәбәхәт. *Дәни кеше.* ■ *Илтифат итмә [даһи] ҡара эстәргә, көлһөн көлгәне, йөҙ ҙә һытма, өлөшөңә киң юлды бир, ҡалһын дәни.* Ғ. Иҫәнбирҙин.

**ДӘНКӘ** [*рус.* деньга] *и.* Ярты тинлек боронғо баҡыр аҡса. *Һәр көмөш аҡса үҙ ауырлығы буйынса ике дәнкәнән торған.* «Совет Башҡортостаны», 1969, 19 июль.

**ДӘНӘМӘ** *и. иҫк. һөйл.* Һис бер нәмә. *Ҡыҙҙар килеп ҡараһа, дәнәмә юҡ.* «Буҙйегет».

**ДӘҢ** *р. диал.* Тура, тиң, тәңгәл, тап. *Дәң килеү.* ■ *Әгәр ҙә беҙҙең юрағандарыбыҙ дәң килеп, беребеҙҙең ҡыҙ, беребеҙҙең ул булһа, ҡоҙа булышырбыҙ»,— тип һүҙ ҡуйыштылар, ти, былар [ике хан]* (Әкиәттән).

**ДӘҢГЕЛӘ** *и. диал.* Зәнге. *Дәңгелә менән ауырыу.*

**ДӘҢГӘРСӘК** *и. диал.* Тәгәрмәс.

**ДӘР** [*фарс.*] *и. иҫк. кит. ҡар.* **ынйы** 1. *Уның өсөн ителер өмөт хәләфтән, уның өсөн сәселер дәрҙәр сәдәфтән.* М. Өмөтбаев.

**ДӘРГӘҺ** [*фарс.*] *и. иҫк. кит.* Ҡапҡа төбө, ишек төбө; тупһа. *[Мулла:] Тогро юлдан яҙып йөрөгәндәрҙе аллаһы тәбәрәкә вә тәгәлә үҙенең дәргәһенән һөрөрмөн тигән.* Х. Ибраһимов. *Күҙҙәремдән йәш түгеп сәждә итәм дәргәһеңә.* Я. Юмаев.

**ДӘРД** [*фарс.*] *и. иҫк. кит.* Ғазап, ҡайғы. *Бер йыл булды, был егет көлмәй йөрөнө, дәрденең һис ғилажын белмәй йөрөнө.* «Буҙйегет».

♦ **Дәрд әйтеү** (*йәки* **уҡыу**) көйләп доға уҡыу. *Әбей матур итеп дәрд уҡый.*

**ДӘРДМӘНД** [*фарс.*] *с. иҫк. кит.* Ҡайғылы, моңло; бисара. *Мин үҙем бер дәрдмәнд диуанамын, ҡайҙа бер тәхҡиҡ күрһәм, ҡыуанамын.* Аҡмулла.

**ДӘРЕС** [*ғәр.*] *и.* **1.** Ниндәйҙер предмет буйынса үткәрелгән уҡыу-уҡытыу һәм шуға билдәләнгән ваҡыт; һабаҡ. *Алгебра дәресе. Йыр дәресе. Дәрес биреү.* ■ *Туған тел дәрестәре уҡыусыға башҡорт теленең матурлығын, төҙөклөгөн, нескәлектәрен асып биреү менән бергә, уҡыусының логик фекерләү һәләтлеген үҫтерергә тейеш.* Ж. Кейекбаев. **Асыҡ дәрес** тәжрибә уртаҡлашыр өсөн уҡытыусылар алдында үткәрелгән дәрес.

**2.** *һөйл.* Уҡыусыға киләһе занятиеға әҙерләп килеү өсөн өйгә бирелгән эш; өйгә эш. *Дәрес әҙерләү.*

**ДӘРЕСЛЕК** *и.* Билдәле бер фәнде уҡытыу, өйрәтеү өсөн тәғәйенләнгән китап. *Мәктәп дәреслеге. Тарих дәреслеге. Әҙәбиәт дәреслеге. Дәреслек төҙөү.* ■ *Бер «Туған тел» дәреслеген уҡыны икең-өсөң, берәүҙәр хатта йәш түкте етмәгән дәфтәр өсөн.* Р. Ниғмәти. *Бына ошо бина эсендә кадеттар корпусына алынған башҡорт егеттәре өсөн беренсе дәреслек хрестоматия тыуған.* К. Мәргән.

**ДӘРЕСХАНА** [*ғәр.*+*фарс.*] *и. иҫк.* Уҡыу бүлмәһе; класс. *Хәҙрәт дәресханаға инеп ултырҙы.* М. Ғафури.

**ДӘРЖ** [*ғәр.*]: **дәрж итеү** *иҫк. кит.* индереү, теркәү. *Китапҡа дәрж ителгән һүрәт.*

**ДӘРИҒ** [*фарс.*] *и. иҫк. кит.* Аяныс, ҡыҙғаныс. *Ағып йылдар бере артынса береһе, дәриг ғүмерем юғалды, кисте барыһы.* Ғ. Иҫәнбирҙин.

□ **Дәриғ итеү** ҡыҙғаныу, аяу.

**ДӘРИҒА** [*фарс.*] *иҫк.* **1.** *ымл.* Эй ҡыҙғаныс, эй аяныс. *[Көбәк:] Һай, дәрига, үтте замана, үтте, бөттө.. Әжәл алҡымымдан ала ла.* Б. Бикбай. *Аһ, дәрига, ҡайғы эсенә төштөм инде* (Бәйеттән).

**2.** *(баш хәреф менән)* Ҡатын-ҡыҙ исеме.

**ДӘРРӘҮ** [*фарс.*] *р.* **1.** Бер юлы, берҙәм. *Дәррәү көлөп ебәреү. Дәррәү ҡуҙғалыу. Дәррәү тотоноу.* ■ *Егет гармунын моңло итеп уйнап ебәрҙе. Ҡыҙҙар уны дәррәү күтәреп алды.* М. Тажи.

**2.** Ырамлы, тиҙ, шәп. *Күмәкләшеп эшкә тотонғас, эш бик дәррәү китте.*

**ДӘРСЕН** [*фарс.*] *и.* **1.** Лавр һымаҡтар ғаиләһенә ҡараған тропик ағас. *Дәрсен ағасы.*

**2.** Шул ағастың хуш еҫле киптерелгән ҡабығы (тәме, хуш еҫе өсөн файҙаланыла). *Сәйгә дәрсен һалып эсеү.* ■ *Ҡарттар .. боронғо Бохар сауҙагәрҙәре заманынан ҡалған дәрсен ҡабығы, зәғфран, хушбый .. алып килеп өйгә бөркөп ебәрҙеләр.* И. Ғиззәтуллин.

**3.** (*йәки* **дәрсен майы**) Шул ағастың ҡабығынан яһалған хушбый. *Хәмзин .. дәрсендең нефттән түгел, ә йылы яҡтарҙа үҫә торған дәрсен ағасының ҡайырынан яһалыуын ентекләп аңлата.* Ә. Бикчәнтәев. *Шул ваҡытта мин: «Әх, Зөләйхаға мин дә дәрсен майы алып бирәһе икән»,— тип уйланым. Ул саҡта мин хушбыйҙың иң яҡшыһы дәрсен тип уйлай торғайным.* Т. Йәнәби.

**ДӘРҪ-ДӘРҪ** *сакр.* Бейәне һауғанда тынысландырыу өсөн әйтелә.

**ДӘРТ** [1] *и.* **1.** Эшкә, тормошҡа булған ашҡыныу тойғоһо, рухи күтәренкелек, ҙур теләк; илһам. *Уҡыу дәрте. Эш дәрте. Көслө дәрт.*

*Дәрт биреү. Дәрт уяныу. Дәрт һүнеү. Дәрт ташып тороу. Күңелгә дәрт һалыу.* ■ *Юлдаш сикһеҙ ҙур дәрт менән эшкә кереште.* Ю. Әхмәҙиев. *Егет кенә сағың үтһен, егет, етмеш ете төрлө дәрт менән* (Халыҡ йырынан).

**2.** Яратыу, һөйөү тойғоһо. *Дәрт уяныу.*

▭ **Дәрт итеү** ныҡ күңел һалыу, ниәтләнеү. *Дәрт иткән кеше гилемде теләгән ерҙән таба.* М. Ғафури. **Дәрт мөйөшләнеү** күңел һалған, дәрт иткән нәмә тормошҡа ашыу. — *Әйҙә, дәртең мөйөшләнһен. Уҡығас, уҡы инде.* С. Агиш.

◆ **Дәрт әйтеү** *шул уҡ* **дәрд әйтеү** (*кар.* **дәрд**).

**ДӘРТ** [2] [*фарс.*] *и. һөйл.* Дәрд.

● *Март сыҡмай — дәрт сыҡмай.* Мәҡәл.

**ДӘРТЛЕ** *с.* Дәрте, илһамы булған. *Дәртле кеше.* ■ *Йыһан әбей йәштәр кеүек дәртле һәм гәйрәтле. «Мына шулай эшләргә кәрәк аны», тип .. эшкә кереште.* Ш. Шәһәр. / Илһам бирә торған, рухландырғыс. *Дәртле бейеү көйө.* ■ *Дәртле йырҙар бирәм тигәндә, йөрәгемдән моңдар түгелә.* Д. Юлтый. / Темпераментлы. *Дәртле кеше.* ■ *Мәүлиха — буйға ҡыҫҡа, йыуантағыраҡ кәүҙәле, һиҫкелле битле, ләкин сәсрәп торған дәртле ҡатын .. Таҙа, йәш ҡатын.* Б. Бикбай.

**ДӘРТЛЕЛЕК** *и.* Дәртле булыу сифаты. *Егеттәрҙең дәртлелеге.* ■ *[Тимер] тәнендә ниндәйҙер еңеллек, күңелендә дәртлелек тойҙо.* Б. Бикбай.

**ДӘРТЛӘНДЕРГЕС** *с.* Дәрт бирә торған, рухландырғыс. *Дәртләндергес йыр. Дәртләндергес һүҙҙәр.*

**ДӘРТЛӘНДЕРЕЛЕҮ** *к. төш. кар.* **дәртләндереү.** *Башҡорт АССР-ында профессиональ сәнғәтте һәм халыҡтың художество ижадын үҫтереү бөтә саралар менән дәртләндерелә.* Башҡорт АССР-ының Конституцияһы, 1984.

**ДӘРТЛӘНДЕРЕҮ** *к.* Дәрт биреү, дәрт уятыу. *Эшкә дәртләндереү. Дәртләндереп ебәреү. Материаль дәртләндереү саралары.* ■ *Ғариф ҡарт менән Булат колхозсыларҙы эшкә дәртләндерҙеләр ..* Б. Бикбай. *Кир ат өҫтөндәге Салауат яуға дәртләндереп йыр башлай* (Халыҡ йырынан).

**ДӘРТЛӘНЕҮ** *к.* Дәрт [2] инеү, дәрт уяныу, дәртҡә тулыу, ашҡыныу, рухланыу. *Эшкә дәртләнеү. Дәртләнеп уҡыу.* ■ *Бер ҙә йоҡлап булмай, дәртләнеп алып, Зөләйханы уйлап тик ятам.* Т. Йәнәби. *Дәртләнеп, йырлап егеттәр, тарталар гармундарын.* Ш. Бабич.

**ДӘРТНӘ** *и. диал.* Бәләкәй сана. *Дәртнә менән утын ташыу.*

**ДӘРТҺЕҘ** *с.* Дәрте юҡ, күңеле һүлпән. *Дәртһеҙ кеше.*

● *Дәртһеҙгә дауа юҡ.* Мәҡәл.

**ДӘРТҺЕНЕҮ** *к.* Дәртҡә тулыу, дәртләнеү, дәрт итеү. *Дәртһенеп күңелем иркендә йырлайым эш йырҙарын!* С. Ҡудаш.

**ДӘРҮИШ** [*фарс.*] *и.* **1.** Донъяуи нәмәләрҙән ваз кисеп, күңелен бөтөнләй дингә һалып, алла бәндәһе булып йөрөгән кеше. *Мин уны [Зөһрәне] күргәс, ҡаушап ҡалдым. Алланың бөйөклөгө алдында маңлайын ергә тейҙергән дәрүиш кеүек булдым.* М. Ғафури.

**2.** *күсм.* Нимәгәлер мөҡиббән китеп, донъяуи нәмәләрҙе онотҡан хыялый, ярлы кеше. *[Һөнәрсе] дәрүиш булып йәшәне, дәрүиш булып үлде бит байғош.* З. Биишева.

**ДӘРҮИШЛЕК** *и.* Дәрүишкә хас сифаттар, дәрүиш булыу хәле. *Һөҙөмтәлә, Көнсығыш илдәрендә дәрүишлек киң тарала, ҡалалар.. тороп ере, ашар ашы булмаған хәйерселәр, берәҙәктәр, ил ҡыҙырыусылар менән тула.* Ә. Харисов. *Сәфәр ҡылдым — дәрүишлектән түгел, түгел ирмәк күреп, ирегеп.* М. Илбаев.

**ДӘРХАН** [*фарс.*]: **дәрхан ятыу** *диал.* иркенләп, йәйрәп ятыу. *Дәрхан ятып йоклау.*

**ДӘРӘЖӘ** [*ғәр.*] *и.* **1.** Йәмғиәттә тотҡан урын, ижтимағи кимәл; абруй. *Дәрәжәһе булыу.* ■ *Ул [Кәмәр әбей] түрҙә, оҫтабикә менән мөйөштә уртаға бүлеп ултыра. Дәрәжәһе оҫтабикәнән бер иле лә кәм түгел.* Ғ. Дәүләтшин. / Эштә, белемдә һ. б. яулаған үр, биләгән урын. *Дәрәжәһе ҙур. Дәрәжәһе бар. Юғары дәрәжәгә өлгәшеү.*

**2.** Рәсми бирелә торған, эш-хеҙмәт баҫҡысын күрһәткән исем. *Фән кандидаты тигән ғилми дәрәжә. Профессор дәрәжәһе алыу.*

**3.** Нимәнеңдер сағыштырма үлсәм кимәле. *Дымлылыҡ дәрәжәһе. Кешенең белем дәрәжәһе.* / Сифат, ҡиммәт кимәле. *Беренсе дәрәжәле диплом.*

**4.** Эш-хәлдең булмыш кимәле. *Илар дәрәжәлә булыу. Тейешле дәрәжәлә өйрәнеү.* ■ *Аҡылдан яҙыу дәрәжәһенә еткән ишкәкселәр өмөтһөҙ ҡараштарын .. Аҙнағолға төбәгән.* З. Биишева.

**5.** *грам.* Сифат, рәүеш кимәлен белдергән грамматик категория. *Төп сифаттарҙың дүрт дәрәжәһе була: төп дәрәжә, артыҡлыҡ дәрәжәһе, сағыштырыу дәрәжәһе, аҙһытыу дәрәжәһе.* Ж. Кейекбаев.

**6.** *мат.* Һанды үҙ-үҙенә ҡабатлауҙан торған математик ғәмәл. *Дәрәжә нигеҙе. Дәрәжәгә күтәреү.*

**7.** *иҫк.* Градус. *Был ярлылар .. бөгөнгә етерлек ашамлыҡ алып ҡайтып бала-сағаларын туйҙырып өсөн шул 25-30 дәрәжә һалҡында торалар ине.* М. Ғафури.

◆ **Артыҡ** (*йәки* **һуң**) **дәрәжәлә** сиктән тыш, бик. *Эй балалар ҡыҙғаныс бит, һуң дәрәжә ҡыҙғаныс.* Д. Юлтый.

**ДӘРӘЖӘЛЕ** *с.* **1.** Юғары дәрәжәгә (1 мәғ.) эйә булған, йәмғиәттә абруйлы; күренекле. *Дәрәжәле генә бер ойошмала ғәҙәттәге эш көнө.* А. Ғирфанов. / Эштә яуаплы урын биләгән; вазифалы. *Дәрәжәле кеше.* ■ *Ғилман старшина дәрәжәле кеше булған. Батшанан алған миҙалы ла булған.* Ғ. Ғүмәр.

**2.** Дәрәжәгә (6 мәғ.) күтәрелгән. *Дәрәжәле тигеҙләмә.*

**ДӘРӘН** *с. диал.* Тәрән.

**ДӘСТ** [*фарс.*] *и. иҫк. кит. кар.* **ҡул** [1] 1.

**ДӘСТҮР** [*фарс.*] *и. иҫк. кит.* **1.** Ҡулланма, ҡағиҙә. *Хәкикәт дәстүренсә ғәмәл итеп, күҙәтәйек истикбал вә хәлебеҙҙе.* С. Яҡшығолов.

**2.** Рөхсәт.

**ДӘСТӘРХАН** [*фарс.*] *и. иҫк. кит.* Ашъяулыҡ. *«Улар [халыҡ] арыш ашап торалар»,— тип, түбән күҙ менән ҡаранылар. Һине кәмһеттеләр. Һине [арышты] ашамай, дәстәрхандарына алмай башланылар.* М. Ғафури.

**ДӘҮ** *с. кар.* **ҙур.** *Дәү йорт. Дәү кеше. Дәү ағай. Дәү апай. Дәү байрам. Дәү булыу. Дәү төркөм. Дәү ғаилә. Дәү ғүмер.* ■ *Ҡыуыш алдына сыкһам, кәзә ояһының ауыҙында ғына дәү бер бүре сүкәйеп ултыра.* С. Кулибай. *Айһай, балаҡай, үҙеңдән дәү һорау бирҙең миңә.* Ғ. Әмири. *Бөгөнгө дәү ҡыуаныстың белмәнем сәбәптәрен.* Х. Кәрим. — *Дәү итеп, шыма ғына яҙ, тинегеҙ.* М. Тажи.

**ДӘҮЕГЕҮ** *к. диал.* Ҙурайыу.

● *Бала йығыла-йығыла дәүегер.* Мәҡәл.

**ДӘҮЕР** [*ғәр.*] *и.* **1.** Йәмғиәт тормошоноң үҙенә хас ваҡиғалар менән билдәләнгән бер ваҡыты; осор. *Беҙҙең дәүер — фән һәм техниканың айлап түгел, көнләп үҫә торған дәүере.* «Совет Башҡортостаны», 1985, 24 февраль.

**2.** Билдәле бер ваҡыт араһы; заман. *Балалыҡ дәүере. Йәшлек дәүере.*

**3.** *геол.* Геологик система ҡатлауҙарында тау тоҡомдары барлыҡҡа килгән билдәле ваҡыт аралығы; эраның бер өлөшө. **Аҡбур дәүере** мезозой дәүеренең өсөнсө геологик осоро.

**ДӘҮЛӘТ** [*ғәр.*] *и.* **1.** Илдә тәртип һаҡлау, ундағы синфи ҡаршылыҡтарҙы баҫыу һәм үҙ властын ғәмәлгә ашырыу өсөн башында хөкүмәт, уның органдары торған политик ойошма һәм ошондай политик ойошмаһы булған ил. *Социалистик дәүләт. Буржуаз дәүләт. Дәүләт башлығы. Дәүләт законы. Дәүләт гербы. Дәүләт гимны. Дәүләт королошо.*

**2.** Байлыҡ, мал-мөлкәт. *Дәүләт туплау.* ■ *Дәүләт илә тулды ғаләм, зиннәт илә — ер йөҙө.* Ғ. Соҡорой.

**3.** *(баш хәреф менән)* Ир-ат исеме.

♦ **Дәүләт ҡошо** *шул уҡ* **дәүләтле ҡош** (*кар.* **дәүләтле**). *Һин икәнһең егет солтаны, дәүләт ҡошо ҡунһын башыңа* (Халыҡ йырынан).

● *Артыҡ дәүләт күҙ сығара.* Мәҡәл. *Ҡәрҙәшһеҙгә кеүәт юҡ, уланһыҙға дәүләт юҡ.* Мәҡәл. *Яҡшы ҡатын — өй дәүләте, яҡшы кейем түй дәүләте.* Әйтем.

**ДӘҮЛӘТ-АРА** *с.* Ике йәки бер-нисә дәүләт өсөн уртаҡ; дәүләттәр араһындағы. *Дәүләт-ара мөнәсәбәт. Дәүләт-ара ойошма.*

**ДӘҮЛӘТЛЕ** *с.* Дәүләте (2 мәғ.) бар, дәүләте булған; бай, мөлкәтле. *Дәүләтле кеше.*

♦ **Дәүләтле ҡош** хөрәфәт буйынса, бәлә-ҡаза килгәндә ярҙам итә торған изге ҡош. *[Йылҡыбай:] Был бит дәүләтле ҡош булырға оҡшай. Ул моғайын, беҙҙән ризыҡ һорайҙыр* (Әкиәттән).

**ДӘҮЛӘТЛӘШЕҮ** *к.* Хосуси милектән хөкүмәт милкенә күсеү (ер һәм халыҡ хужалығының төрлө тармаҡтарына ҡарата). *Дәүләтләшкән хужалыҡ.*

**ДӘҮЛӘТЛӘШТЕРЕҮ** *к.* Ер һәм халыҡ хужалығының төрлө тармаҡтарын хосуси милектән дәүләт милкенә күсереү. *Промышленносты дәүләтләштереү. Ерҙе дәүләтләштереү.*

**ДӘҮЛӘТСЕЛЕК** *и.* Дәүләт төҙөлөшө, дәүләт ойошмаһы. *Милли дәүләтселек дөйөм дәүләт мәнфәғәттәре менән милли мәнфәғәттәрҙе бер-береһенә ҡушып алып барыу өсөн иң яҡшы форма булып тора.* «Совет Башҡортостаны», 1966, 28 май.

**ДӘҮМӘЛ** *и.* **1.** Ниҙеңдер күләме, һыҙымы; ҙурлыҡ. *Есемдең дәүмәле. Нәмәнең дәүмәлен үлсәү.*

**2.** Үлсәргә һәм иҫәпләргә мөмкин булған һәр төрлө нәмә. *Даими дәүмәл. Үҙгәреүсән дәүмәл. Үҙәккә ынтылыу көсөнөң дәүмәле. Һандың абсолют дәүмәле. Тиҙлек дәүмәле.*

**3.** Берәй нәмәнең һан йәһәтенән булған ҙурлығы; күләм. *Эштең дәүмәле.*

**4.** *кар.* **күләм** 3.

**ДӘҮМӘЛЛЕ** *бәйл. диал.* Дәүмәллек.

**ДӘҮМӘЛЛЕК** *бәйл.* Күләм яғынан сағыштырғанда ҡулланыла; ҙурлыҡ, ҡәҙәр. *[Шәрифә:] Мин ҙурайғас, ошо урман дәүмәллек итеп бакса ултыртам. Унда бөтә емеш ағастарын йыям.* И. Ғиззәтуллин. *Һарыҡ башы дәүмәллек картуфтар .. килеп сыкһа, мин түҙмәйенсә ҡысҡырып ебәрәм.* Н. Мусин.

**ДӘҮРАН** [*ғәр.*] *и. иҫк. кит.* Быуат, дәүер, заман. *Рәхәтлектә үткәндер нисә дәүран, ере киң һәм мәғишәтләре фәрауан.* С. Яҡшығолов.

♦ **Дәүран һөрөү** ғүмер итеү. *Аппаҡ тирмәләр ҡороп, мал менән күсеп йөрөп, йөрөгәндәр дәүран һөрөп* (Бәйеттән).

● *Йәш кешегә дәүран күп.* Мәҡәл.

**ДӘҮРӘ** [*ғәр.*] *и. иҫк.* Бөтә тирә, әйләнә тирә. // *[Азия:] Дәүрә ғаләм бәндәләргә килер алмаш.* М. Ғафури.

**ДӘҮӘ** *и. диал.* Дөйә. *Ҡыҙ атаһына бер айғыр дәүә килтереп бирә: «Һин ошо дәүәне атланып бар», — ти* (Әкиәттән).

**ДӘҮӘЙЕҮ** *к.* Дәү булыу, ҙурайыу. *Тағы бер йылға дәүәйеп, карттар әйтмешләй, олоға һынланып ҡайттым.* Ә. Вахитов.

**ДӘҮӘЙТЕҮ** *к.* Дәү итеү; ҙурайтыу.

**ДӘҮӘТ** [*ғәр.*] *и.* **1.** Һул иңбаштан уң ҡултыҡ аҫтына төшөрөп түшкә ҡыялатып кейә торған таңкә, мәрйен баҫылған ҡатын-ҡыҙҙар биҙәүесе; әмәйлек, хәситә. *Ҡоҙағыйҙар әберкәле күлдәктәрен,.. таңкәләр ҡыя итеп теҙелгән дәүәттәрен кейеп алды.* Ф. Иҫәнғолов.

**2.** *кар.* **дәғүәт** 2. *Дәүәтте күкрәк өҫтөнә һалыу.*

**ДӘФҒЕ** [*ғәр.*] *и. иҫк. кит.* Кире ҡағыу, бөтөрөү. *..Һал күҙеңде Һиндостанға, әсир булған йөҙ миллион мосолманға. Дәфғе итергә ҡулда кеүәт булмағандан мотиғ булды бик аҙ ғына бер дошманға.* М. Ғафури.

**ДӘФҒӘ** [*ғәр.*] *и. иҫк. кит.* Тапҡыр, ҡабат.— *Бер нисә дәфғә үгәй атамдан шәһәр хәстәханаһына алып барыуын үтенеп тә алып барманы.* А. Таһиров.

**ДӘФҒӘТӘН** [*ғәр.*] *р. иҫк. кит.* Көтмәгәндә, ҡапыл. *Йәмле тылсым саткыһы мөғжиз төҫө дәфғәтән яктыртты һәм балкытты нур, нур менән тулды йыһан.* Ш. Бабич.

**ДӘФЕН** [*ғәр.*]: **дәфен ҡылыу** (*йәки* **итеү**) *иҫк.* ерләү, күмеү. *Шәғәли бей донъянан үтте. Сәсәлкә ата янына дәфен ҡылдылар.* «Башҡорт шәжәрәләре», 1960. *[Егет:] Илан ерҙә ятам — хәлемде кем белә? Йәнем сыкһа, бында — дәфен кем ҡыла?* (Бәйеттән).

**ДӘФЕНЛӘҮ** *к. иҫк.* Ерләү, күмеү; дәфен ҡылыу. *Вафат булһаҡ, ҡайҙа беҙҙе кәфенләмәк, йыназа уҡып, ҡайҙа беҙҙе дәфенләмәк* (Бәйеттән).

**ДӘФНӘ** [*фарс.*] *и. иҫк.* **1.** Япрағы лавр япрағына, емеше сейәгә оҡшаған, лаврҙар ғаиләһенә ҡараған йылы яҡ ағасы (Иран, Кавказ, Балҡан ерҙәрендә үҫә).

**2.** Шул ағастың емеше.

**ДӘФТӘР** [*фарс.*] *и.* **1.** Яҙыу, рәсем төшөрөү өсөн тышлап бергә беркетелгән таҙа ҡағыҙ биттәре. *Буй дәфтәр. Шаҡмаҡ дәфтәр. Ҡалын дәфтәр. Рәсем дәфтәре. Яҙыу дәфтәре. Дәфтәр бите.* ■ *Сәгиҙә уҡыусыларҙың йортҡа алып ҡайтҡан дәфтәрҙәрен ҡараштыр[ҙы].* М. Тажи. / Нимәгәлер махсус тәғәйенләп эшләнгән шул уҡ нәмә. *Керем дәфтәре. Көндәлек дәфтәре. Иҫтәлек дәфтәре. Сығым дәфтәре. Тәьҫораттар дәфтәре.* **Ҡуйын дәфтәре** бәләкәй генә дәфтәр; блокнот (төрлө нәмәләрҙе яҙып барыу өсөн ҡулланыла).

**2.** (*йәки* **ғәмәл дәфтәре**) Дини ырым буйынса, фәрештәләр кешенең яман-яҡшы эшен теркәп бара торған дәфтәр (йәнәһе, ураҙа алдынан дәфтәр алышына: унда үлә торған кешеләрҙе юйып, тыуа торған кешеләрҙе яҙалар).

♦ **Күңел** (*йәки* **хәтер) дәфтәре** хәтерҙә ҡалған нәмә; хәтирә.

**ДӘХЕЛ** [*ғәр.*] *и. иҫк.* Ҡатнашлыҡ, ҡыҫылыш. — *Башҡаларҙың үлемендә минең өлөшөм булған кеүек, минең тереклегемдә мәрхүмдәрҙең дәхеле бар.* М. Кәрим.

▭ **Дәхел булыу** ҡатнашыу. *Шул байҙар сифатына кем булһа дәхел, булыр уның бөтә маҡсуды хасил.* М. Ғафури.

**ДӘХИ** *р. диал.* Тағы. *Ҡуҙый иртә тора ла дәхи уйнарға сығып китә.* «Ҡуҙыйкүрпәс менән Маянһылыу». *Тугайҙа үҫә йәм-йәшел үләндәр, дәхи күл ситендә шаулай күрәндәр.* С. Яҡшығолов.

**ДӘҺАН** [*фарс.*] *и. иҫк. кит.* Ауыҙ. *Кем дәһанымды тешләп ҡанатты? Кем һуң ул?* Ш. Бабич.

**ДӘҺЕР** [*ғәр.*] *и. иҫк. кит.* Заман, осор; дәүер. *Һандары тик аллаға мәғлүм дәһерҙәр үтеп, етте хәҙер ошо ғасырҙар.* Ш. Бабич.

**ДӘҺРИ** [*ғәр.*] *с. иҫк.* Аллаһыҙ, динһеҙ, дин тотмаусы *[Мулла — Ырыҫбайға:] Хәсис, дәһри, ғүмереңдә бер мәсеткә килгәнең юҡ* (Әкиәттән).

**ДӘҺШӘТ** [*ғәр.*] *и.* Ҡот оҫҡос, ҡурҡыу һалған нәмә, ныҡ ҡурҡыныс. *Үлем дәһшәте. Һуғыш дәһшәте. Дәһшәт һалыу. Дәһшәт ороу.* ■ *Гөрләгән туп дәһшәтенән йәш йөрәккә ҡан һауа.* Д. Юлтый. *Ауылда яҡынайып килгән ҡурҡыныс, быға̄са улар күрмәгән дәһшәт тураһында һөйләй башланылар.* Ғ. Хәйри.

**ДӘҺШӘТЛЕ** *с.* Ҙур бәлә-ҡаза килтергән, ҡот оҫҡос яман; ҡурҡыныслы, афәтле. *Дәһшәтле заман. Дәһшәтле йылдар. Дәһшәтле һуғыш.* ■ *Дәһшәтле 1941 йыл. Ҡәбәхәт дошман яуы Тыуған илебеҙгә ҡара һөрөм булып ябырылды.* И. Ниғмәтуллин.

**ДЮЙМ** [*рус.* ⟨ *гол.*] *и.* 2,54 см-ға, $^{1}/_{12}$ фута тигеҙ булған оҙонлоҡ үлсәүе. *Дюйм менән эш итеү.*

**ДЮЙМЛЫ** *с.* Билдәле бер дюймға тигеҙ булған, дюйм менән үлсәнгән. *Өс дюймлы туп.* ■ *Ун дюймлы снарядтарҙың бераүһе мине лә бәреп йыға. Иҫ китә...* Ш. Хоҙайбирҙин.

**ДЮН** [*рус.* дюны ⟨ *нем.*] *и.* Диңгеҙ буйындағы ел килтергән ҡом убаһы.

**ДЮРА́ЛЬ** [*рус.*] *и. кар.* **дюралюмин.**

**ДЮРАЛЮМИН** [*рус.* дюралюминий] *и.* Баҡыр, магний, кремний ҡушып ҡойолған еңел, ныҡ алюмин иретмәһе. // *Дюралюмин тимерсыбыҡ. Дюралюмин торба.*

**ДЮШЕ́С** [*рус.* ⟨ *фр.*] *и.* Шәрбәтле, һутлы, йомшаҡ груша сорты.

# Ҙ

**Ҙ** [ҙә] Башҡорт алфавитының етенсе хәрефе.

**ҘА** (ҙә) *киҫ. кар.* **ла** [2]. *Хәбәрем бар күп ерҙәрҙән, батыр ҙа батыр ирҙәрҙән: Тамъян, Ҡытай, Бөрйәндән..* Салауат. *Ауыр ҙа юлда, уйҙар менән төн уҙҙырыу..* Ғ. Амантай.

♦ **Ҙа баһа** *шул уҡ* **ла баһа** (*кар.* **баһа** [2]).

**ҘАБАҺА** (ҙәбаһа) *киҫ. шул уҡ* **ҙа баһа** (*кар.* **баһа** [2]).

**ҘАЙҒ** [*ғәр.*]: **ҙайғ булыу** *иҫк. кит.* юғалыу. *Был яҙыуҙар барсаһы Аксаков ҡулында ҙайғ булып, Неплюев ни ҡәҙәр эҙләһә лә, таба алманы.* М. Һаҙыев. **Ҙайғ итеү** (*йәки* **ҡылыу**) юғалтыу, әрәм итеү.

**ҘАЛӘЛӘТ** [*ғәр.*] *и. иҫк.* Аҙғынлыҡ, яңылышлыҡ. *Ник улай тиһәң, тегеләр фәкир, ҙаләләттә мадәм.* С. Яҡшығолов.

**ҘАРАБА** [*ғәр.*] *и. иҫк.* Бәреү, һуғыу, туҡмау. *[Зариф:] Ярман вә Әүстриә мәмләкәттәре һуғыш башлағандар. [Улар] ғәйрәтле Рәсәй ғәскәрҙәренең ҡаты ҙарабаһына осрағандар.* Н. Ҡәрип.

**ҘИЛЛӘТ** *и. кар.* **зилләт.** *Дәртһеҙҙәрҙең эше юҡ һиммәт менән,.. халыҡтың ҡарашында ҙур күренеп ғүмере үтер бисараның ҙилләт менән.* Аҡмулла.

**ҘУР** [*фарс.*] *с.* **1.** Дәүмәле, күләме саманан артыҡ; дәү; киреһе бәләкәй. *Ҙур ағас. Ҙур алма. Ҙур баҡса. Ҙур бүлмә. Ҙур йылға. Ҙур ҡала. Ҙур һауыт. Ҙур итеп яһау.* ■ *Индрил .. ауыҙын ҙур асып иҫнәне.* Д. Юлтый. *Осонан осона тиклем буранланып, йәйрәп ята Себер ҙур булып.* Р. Ниғмәти. *Күл ситендәге .. тирәктең башында өй саҡлы ҙур бер оя, ти* (Әкиәттән). / Һан яғынан ғәҙәттәгенән артыҡ; күп, күмәк. *Ҙур ғаилә. Ҙур класс. Ҙур төркөм.* ■ *[Зәйнәп:] Үҙем эшләйем мин, эш хаҡым ҙур.* Ғ. Сәләм.

**2.** Көсө, кеүәте, кимәле, дәрәжәһе буйынса саманан артыҡ, өҫтөн. *Ҙур айырма. Ҙур баһа. Ҙур бәхет. Ҙур ғәйеп. Ҙур иғтибар. Ҙур көс. Ҙур маҡсат. Ҙур оҫталыҡ. Ҙур өмөт. Ҙур талап. Ҙур теләк. Ҙур тәжрибә. Ҙур уңыш. Ҙур үкенес. Ҙур файҙа. Ҙур хөрмәт. Ҙур һуғыш. Ҙур шатлыҡ. Ҙур ышаныс.* ■ *Конструктор булмаҡ була Сәйҙел. Ҙур өмөттәр унан көтәләр.* Ғ. Сәләм. *Өйрәнсек эштә .. сикһеҙ ҙур оҫталыҡ, йылғырлыҡ күрһәтә.* З. Биишева.

**3.** Йәш яғынан оло; өлкән. *Ҙур ҡыҙым. Ҙур улы. Ҙур булыу.* ■ *Көн ҡыҙҙыра. .. Ҙурыраҡ малайҙар тал айғырҙар менеп уйнаҡлашып, китәләр бейек тауҙарға.* Ғ. Амантай. / *и. мәғ. күпл.* **ҙурҙар** Йәше ҙур кешеләр, өлкәндәр.

**4.** Әһәмиәткә эйә булған; мөһим, оло. *Ҙур байрам. Ҙур ваҡиға. Ҙур йомош. Ҙур йөкләмә. Ҙур мәсьәлә. Ҙур итеп һөйләү.* ■ *Генерал беҙҙе стройға ҡуйҙырып һөйләй башланы: — Шанлы рус ғәскәре һәр көн ҙур еңеүҙәр менән алға бара.* Д. Юлтый. *Ҡыйын эштәр еңеләйә, булһаң тырыш, .. ҙур эште ҙурлап үтәү — һиңә бурыс.* Ш. Бабич.

**5.** Юғары дәрәжәгә эйә булған; танылы. *Ҙур исем. Ҙур түрә. Ҙур урын. Ҙур яҙыусы.* ■ *Был папка Йәнтимергә бик килешеп тора. Ул, ҙур кешеләр кеүек, маңлайын йыйырсыҡландырған булған.* С. Агиш. *Ҙур йәнеңде хур итеп, йөрөмә кәҙерһеҙ тән менән.* Ш. Бабич.

**6.** Ваҡыт аралығы оҙон; оҙаҡ. *Ҙур ғүмер.*

◆ **[Эште, һүҙҙе] ҙурға ебәреү** мөһимгә әйләндереү, ҡатмарландырыу. *Мине һөйәләр. Мин дә шундай әйберҙәрҙе кисерәм. .. Ауыр итеп, эште китаптарҙағыса ҙурға ебәреп түгел .. рәхәтләнеп ғазапланам бит.* С. Агиш. **[Эш, һүҙ] ҙурға китеү** мөһимгә әйләнеү, ҡатмарланыу. *Уның [Йәнтимерҙең] һуғыша торған ғәҙәте юҡ. Эштең ҙурға китмәҫен белеп торам.* С. Агиш. **Ҙур һөйләшеү** үҙеңде эре тотоп, маҡтанып, шапырынып һөйләшеү. *[Ғөбәйҙулла:] — Был хәйерсе ерҙә йәшәп булмаҫ инде! [Шәүәли:] — Мырҙам, улай ҙур һөйләшмә. Ергә төкөрмә, кире яларға тура килмәһен.* Р. Солтангәрәев.

● *Һуҡмаҫ ҙур ҡутәрә.* Мәҡәл.

**ҘУРАЙТТЫРЫУ** *ҡ. йөкм. ҡар.* **ҙурайтыу.**

**ҘУРАЙТЫЛЫУ** *ҡ. төш. ҡар.* **ҙурайтыу.** *Ҙурайтылған һүрәт.*

**ҘУРАЙТЫУ** *ҡ.* Ҙурға (1 мәғ.) әйләндереү, ҙур итеү. *Фотоһүрәтте ҙурайтыу. Ҙурайтып күрһәтеү.* ■ *Суҡышы менән тишекте ҙурайтып, ҡош Алпамыша янына үҙе лә килеп ингән, ти.* «Алпамыша».

**ҘУРАЙЫУ** *ҡ.* **1.** Дәүмәл, күләм үлсәме артыу. *Күл ҙурайған.* ■ *Ҡатындың төҫө ағарған, күҙҙәре ҙурайған, һулышы ҡыҫылған.* Д. Юлтый.

**2.** Көсө, кимәле артыу; көсәйеү. *Сәғиҙә ҡарсыҡтың да быйыл ҡайғылары береһенән береһе ҙурайып китте.* Һ. Дәүләтшина.

**3.** Йәш үҫеү, өлкәнәйеү. *Буҙансы ай үҫәһен көн үҫеп, ҙурайып киткән* (Әкиәттән).

**4.** Әһәмиәте артыу, мөһимгә әйләнеү, мөһим төҫ алыу. *Рәхимә был хәбәрҙең бара торғас былай ҙурайып китеүенән тағы ла нығыраҡ хафаға төштө.* Һ. Дәүләтшина. *Йылдар үткән һайын ҙурайыр ул, ул мәңгелек кеүек юғалмаҫ, Ленин, һине беҙҙән .. мең һәм миллион үлем айыра алмаҫ.* М. Хәй.

**5.** Һан яғынан артыу, күбәйеү. *Ғаилә ҙурайҙы.*

**ҘУРАТ** *и.* Башын-башҡа бергә терәп, арҡырыға теҙеп һалған көлтә өйөмө. *Ҙурат һалыу. Көлтәне ҙуратҡа һалыу.* ■ *Усмаларҙан булды көлтәләр, көлтәләрҙән ҙурат ҡуйылды, ҙураттарҙан кәбән ҡойолдо.* М. Кәрим.

**ҘУРЛАНЫУ** *ҡ.* **1.** *төш. ҡар.* **ҙурлау.**

**2.** *диал. ҡар.* **эреләнеү 2.** *Теге себен эреләнеп быға ҡарап, ҙурланып, тамаҡ ҡырып бирҙе яуап.* М. Ғафури.

**ҘУРЛАУ** *ҡ.* Ҡәҙер-хөрмәт итеү, ололау, хөрмәтләү, ихтирам итеү. *[Тарғынбай:] .. һинең көмөш миҙалың өсөн бирелә торған премияны бөгөн киске мәжлестә ағай-эне алдында күрерһең. [Шәғәли:] Ҙурлауың өсөн рәхмәт, ағай.* Ғ. Әхмәтшин. *.. Класташтары еңеү менән ҡайтҡан Әҙһәмде ҙурлап ҡаршы алды.* Р. Низамов. *Халыҡ Урал батырҙы бик ҙурлап, хөрмәтләп ҡалҡыуыраҡ бер ергә ҡүмде, ти.* «Урал батыр».

● *Үҙеңде ҙурлама, кешене хурлама.* Әйтем.

**ҘУРЛЫҠ** *и.* **1.** Нимәнеңдер дәүмәл, күләм үлсәме. *Бүлмәнең ҙурлығы. Ҡаланың ҙурлығы. Төрлө ҙурлыҡтағы нәмәләр.* ■ *Утарҙың ҙурлығы һәм байлығы Айбулаттың иҫен китәрҙе.* Һ. Дәүләтшина. *[Януҙаҡ ҡарт:] Бай бит беҙгә тын алырға ла ирек бирмәй торғайны. Тамаҡ ялғағанда ла ат күҙе ҙурлығы түш сәғәтенә әлдән-әле ҡарап торор ине.* М. Тажи. *Хан тирмәһенең ҙурлығы ике өйөр йылҡы һыйырлыҡ булған* (Әкиәттән).

**2.** Башҡаларҙан өҫтөнлөк, бөйөклөк, дәрәжә. *Әмәл көтөп ятыу — хурлыҡтыр, ҡорал тотоп үлеү — ҙурлыҡтыр.* М. Кәрим. *[Урал батыр халыҡҡа:] — Миңә бер ҙурлыҡ та кәрәкмәй! Ил батыры шул булыр — кеше һөйөр ир булыр.* «Урал батыр».

**3.** Хөрмәт, ихтирам. *Ҙурлыҡ менән. Ҙурлыҡ күрһәтеү.*

● *Ил һаҡлау — ҙурлыҡ, ил баҫыу — хурлыҡ.* Әйтем. *Тырышлыҡ — ҙурлыҡ, ялҡаулыҡ — хурлыҡ.* Әйтем.

**ҘУРЫҒЫУ** (ҙурыҡ*ғ*) *ҡ.* Шәп сабыу арҡаһында хәлдән тайыу (атҡа ҡарата); яныу. *Ҙурығыуҙан ат үлем хәленә етә йә үлеп тә ҡала.* Һ. Дәүләтшина.

**ҘУРЫҠТЫРЫУ** *ҡ.* Шәп саптырып хәлдән тайҙырыу (атҡа ҡарата). *Атты ҙурыҡтырыу.*

**ҘӘББӘТ** [*ғәр.*]: **ҙәббәт итеү** һаҡлау. *Башҡорт халҡының телен ҙәббәт итеп ҡалыу өсөн беҙ мәҡәлдәрҙең йыйылған кәҙәрен хәҙергә беренсе киҫәк итеп сығарабыҙ.* Х. Ғәбитов.

**ҘӘМИМ** [*ғәр.*] *с.* Хурлыҡлы, ярамай торған насар. // *Ғәжәптер был заман халҡы, кейерҙәр шамәи дәлки, китәрмәҫтәр яман холоҡто, арынмаҫтар ҙәмимдәрҙән* (Мөнәжәттән).

# Е

**Е** Башҡорт алфавитының һигеҙенсе хәрефе.

**ЕБЕГӘН** *с.* **1.** Шыйыҡ, һыу һымаҡ нәмә тейеү арҡаһында йомшаҡҡа әйләнгән; йомшаған. *Ебегән икмәк. Ебегән ҡорот.*

**2.** *кусм.* Үтә йомшаҡ тәбиғәтле; булдыҡһыҙ, ихтыярһыҙ; ебек. *Ебегән әҙәм.* / Юҡҡа-барға күңеле тулып, илап барған; илаҡ. *Ебегән малай, гел илап йөрөй.* **Ебегән ауыҙ** булдыҡһыҙ, эшлекһеҙ (кешегә ҡарата әйтелә).

**ЕБЕК** *с. ҡар.* **ебегән.** *[Фәнил — Хәмзәгә:] Их, һин! Мин һине бик батыр тип уйлай инем, ә һин ебек икәнһең.* С. Агиш. *Юлдашы булмам һис ваҡыт ебектең, орсоғо булмам һис ваҡыт сүбәктең.* С. Ҡудаш.

**ЕБЕНЕҮ** *ҡ. ҡайт. ҡар.* **ебеү** 1,2. *Йылы һыуҙа ебенеү.*

**ЕБЕР** *с. диал. ҡар.* **убыр 2.**

**ЕБЕТЕЛЕҮ** *к. төш. кар.* **ебетеү.** *Ебетелгән кер.*

**ЕБЕТЕҮ** *к.* **1.** Һыулап йомшатыу, иҙелдереү. *Ҡорот[то] ебетеү. Шөкәрәне ебетеү.* ■ *Зилә әсәһенең ебетергә һалып ҡуйған керен йыуа башланы.* Ә. Хәмәтдинова.

**2.** Кипкән нәмәне һыулап, еүешләп, тейешле йомшаҡлыҡҡа килтереү; сылатыу. *[Ҡорбан:] — Әсе ҡатыҡ менән киҫәк-коҫаҡ ҡатҡан икмәктәрҙе ебетеп ашай ҙа .. алмайым.* С. Ҡудаш.

**3.** Туң ер иреп, аяҡ аҫты, юл бысраҡ хәлгә килеү; еншекләнеү. *Көн ебетте. Бөгөн ебетеп тора.*

♦ **Тамаҡ ебетеү** *кар.* **тамаҡ 1. Һерен ебеткән** бик булдыҡһыҙ, йомшаҡ. *[Ишбулды:] Һерен ебеткән Иркәбайға колхозда тағы ниндәй эш табайым мин?* Ғ. Әмири.

● *Сей йүкәне ебетһәң, ҡайыштан нык була.* Әйтем.

**ЕБЕТКӘҘӘК** *с. диал.* Епшек. *Ебеткәҙәк ҡар.*

**ЕБЕТКӘК** *с.* Йылы тәьҫир менән йомшаған, ирегән; епшек, еүеш. *Ебеткәк буран. Ебеткәк көн. Аяҡ аҫты ебеткәк.* ■ *Ебеткәк ҡарҙа резина итегем тайып, бер-ике рәт йығылып та алдым.* Н. Мусин.

**ЕБЕТКӘҮ** *с. диал.* Епшек. *Ебеткәү көн.*

**ЕБЕТТЕРЕҮ** *к. йөкм. кар.* **ебетеү** 1, 2.

**ЕБЕҮ** *к.* **1.** Һыу тәьҫирендә йомшау, иҙелеү. *Ебегән ҡорот. Ебегән кер.* ■ *Икмәктәре ебеп, тауыҡ еме һымаҡ таралып бөткән.* Т. Йәнәби.

**2.** Еүешләнеп, тейешле йомшаҡлыҡҡа килеү; сыланыу. *[Гөлйөҙөм:] Сәй эсеп, тамаҡ ебегәс, инәйемде бер йырлатып алырбыҙ.* Һ. Дәүләтшина.

**3.** *күсм.* Көс, хәл бөтөү; хәлһеҙләнеү. *Эҫе мунсала ебене лә төштө.* ■ *Ә ауырыу [Моргунов] .. үҙенең сирле булыуын тойҙо. — Өфөгә һиңә барырға тура килер. Мин тамам ебенем тине ул Миҙхәткә.* Б. Рафиков.

**4.** *күсм.* Ихтыяр көсөн юғалтып, йомшарыу. *Ебеп барыу. Ебеп китеү.* ■ *[Булат:] Ебеп тороу, ҡайғырып ултырыу беҙгә килешә торған нәмә түгел.* З. Ғәлимов. / Эш-тормошҡа йомшаҡ, булдыҡһыҙ булыу. *Ебегән егет. Ебеп йөрөү.* ■ *— Ярар, уҡырға йөрөрһөң. Егет булғас, егет бул, ебеп торма.* Н. Ҡәрип.

**ЕБЕШКӘК** *с. диал.* Епшек. *Ебешкәк ҡар.*

**ЕБӘЙ** *и. диал.* Бажат.

**ЕБӘК** *и.* **1.** Тут ағасы ҡорто бүлеп сығарған, һауала еп һымаҡ булып ҡата торған матдә. *Ебәк ҡорто.*

**2.** Шул матдәнән йәки яһалма синтетик сүстән эшләнгән еп. *Ебәк менән сигеү. Ебәккә мәрйен теҙеү.* ■ *Ебәккәй ҡушып үрә алманым ерәнсәкәй атым ялына* (Халыҡ йырынан). *Йомғаҡтай, йомғаҡ ебәкте йомарлаһағыҙ ни була?* (Сеңләүҙән).

**3.** Шул ептән йәки яһалма синтетик сүстән һуғылған нәфис туҡыма. *Ебәктән күлдәк тегеү.* ■ *[Колкай Зөлхизәгә:] һиндә ниндәй ҡайғыхәсрәт булһын, ти? Ашағаның май ҙа бал, кейгәнең шау ебәк.* Н. Иҙелбай. **Ебәк кеүек** (*йәки* **һымаҡ**) 1) нәфислеге, йомшаҡлығы, ялтырауыҡлығы менән ебәк туҡымаға оҡшаш. *Ебәк һымаҡ йомшаҡ толом.* ■ *Ебәк кеүек йомшаҡ ҡара сәстәр Зөлхизәнең зифа буйын тотош ҡаплап, аҡ ебәк күлдәк өҫтөнә ҡара күләгә ташлай.* З. Биишева; 2) үтә йомшаҡ тәбиғәтле, кешегә яғымлы, нәфис, наҙлы. *Ебәк кеүек ҡыҙ.* ■ *[Хәбибә еңгә Ҡәнзәфәргә:] Ҡыҙымдың күңелен аҙҙырҙың. .. Хәҙер һинең арҡаңда ебәк кеүек балам теш-һүҙгә ҡыҫыла башланы ..* Д. Юлтый.

**4.** *с. мәг.* Шундай туҡымаларҙан яһалған, тегелгән. *Ебәк бау. Ебәк еп. Ебәк билбау. Ебәк яулыҡ. Ебәк күлдәк. Ебәк елән.* ■ *Ебәк кенә билбау бил күрке, батыр ғына егет ил күрке* (Халыҡ йырынан). *Ебәк баулы күк ҡарсыға талпыныр ҡош күреп* (Халыҡ йырынан).

♦ **Ебәк күбәләге** 1) ҡорттар үҙе айырып сығарған матдәнән еп һымак булып ҡатҡан ҡуҙы — ебәк ҡорто йомғағы яһаған күбәләк; 2) ҡорттары ултыртылған ағастарҙың ҙур зыян килтерә торған ҡайһы бер зарарлы күбәләктәрҙең атамаһы. *Ҡарағусҡыл ебәк күбәләген алайыҡ. Ул ҡарағай, шыршы, ҡарағас кеүек әһәмиәтле һәм ҡиммәтле ағас өсөн иң ҡурҡыныслы ҡоротҡос булып тора.* З. Әминев. **Ебәк ҡорто** ебәк күбәләгенең ҡорто.

**ЕБӘК-ҠАМҠА** *и. йыйн.* Төрлө затлы тауар. *Батшаның кейгәне ебәк-камка, ашағаны бал да май, ти* (Әкиәттән).

**ЕБӘЛӘЙ**[1] *и.* Ҡылғандың елгә елберләп ултырған йөнтәҫ башы.

♦ **Ебәләй баш** елберләп торған һары сәсле ҡыҙҙарға ҡарата әйтелә.

**ЕБӘЛӘЙ**[2] *и. диал.* Бажат.

**ЕБӘРЕЛЕҮ** *к. төш. кар.* **ебәреү** 1—4, 8. *Был хат беҙҙең полк штабына ебәрелгән.* Д. Юлтый.

**ЕБӘРЕҮ** *к.* **1.** Кемделер билдәле бер урынға берәй маҡсат, эш, йомош менән оҙатыу. *Уҡырға ебәреү. Эшкә ебәреү. Илсе ебәреү. Яусы ебәреү. Төрмәгә ебәреү. Һөргөнгә ебәреү.* ■ *Алыҫ юлға әҙерләйҙәр аттарҙың иң яҡшыһын, ҙур йомошҡа ебәрәләр ирҙәрҙең иң затлыһын.* М. Кәрим. *Зәйнәпте Мәскәүгә ебәрҙеләр, өлкән профессорҙар ҡараны.* Ғ. Сәләм. / Ниндәйҙер бер эшкә билдәләп, шул эш өсөн яуаплы кеше итеп оҙатыу. *Уҡытыусы итеп ебәреү.* ■ *Үҙебеҙҙең пекарня һалдаттары мине «Ырымбур мосолман хәрби комитеты» тигән ойошмаға вәкил итеп ебәрҙеләр.* Т. Йәнәби.

**2.** Ҡайҙалыр китергә, ҡайҙалыр йүнәлергә мөмкинлек биреү, ихтыяр итеү. *Дәрестән ебәреү. Ебәреп тороу.* ■ *Капитан мине ебәрҙе. Тышҡа сыҡҡас, был турала үҙемә иҫәп бирә алманым.* Д. Юлтый. *Мейес тирәһенә бармағыҙ. Балаларҙы унда ебәрмә. Шырпы, бысаҡ кеүек нәмәләрҙе балалар ҡулына тотторма.* Ғ. Дәүләтшин.

**3.** Нимәнелер икенсе урындағы кешегә тапшырыу өсөн кеше йәки почта аша оҙатыу. *Аҡса ебәреү. Күстәнәс ебәреү. Хат ебәреү. Посылка ебәреү.* ■ *Ҡайтҡас та хат ебәр, Зәйнәпкәйем. Почта һайын хатың көтөрмөн.* Ғ. Сәләм. / Берәй хәбәр, һүҙ оҙатыу, тапшырыу. *Сәләм ебәреү. Хәбәр ебәреү.* ■ *Ә йондоҙҙар миллион йылдар аша бер-береһенә сәләм ебәрә.* М. Кәрим.

**4.** Ирекке сығарыу, ирек биреү. *Малды үрешкә ебәреү.* ■ *Һеҙ ситлек ҡошон ҡуҙ алдығыҙға килтерегеҙ, уны ситлектән сығарып ебәрһәң,*

*канаттарын йәйеп һауаға күтәрелә, оса, үйнай..* М. Тажи. / Хәрәкәткә тулы ирек биреү, тыйып тотмау. *Ҡарт дилбегәһен арбаға һалып, атты үҙ ыңғайына ебәрҙе.* М. Тажи.

**5.** Нимәнәндер тотоп торған ҡулды ысҡындырыу. *Ҡулды ебәреү.* ■ *Ебәрһәнә, Йомағол, беләкәйемде, һыу сайҡалып түгелә күнәктән* (Халыҡ йырынан). *Ебәр, егет, сәсемде, бүлдермә һин эшемде.* «Заятүләк менән Һыуһылыу».

**6.** Кемгә йәки нәмәгә яҡынайырға мөмкинлек биреү, ирек ҡуйыу. *Яҡын ебәреү.* / *Ваҡытлыса ҡунып китергә рөхсәт итеү. Фатирға ебәреү.*

**7.** Машина, механизмды хәрәкәткә килтереп, эшләтә башлау. *Моторҙы ебәреү. Сәғәтте ебәреү.* / Хәрәкәттең йүнәлешен, урынын йәки тиҙлеген элекке хәленән икенсегә күсереү, үҙгәртеп ҡуйыу. *Сәғәтте алға ебәреү. Сәғәтте артҡа ебәреү.*

**8.** Нимәнелер бер йүнәлештә хәрәкәт иттереү, осортоу, ағыҙыу. *Йылға һыуын икенсе яҡҡа ебәреү. Газ ебәреү.*

**9.** Тоҫҡап атыу, бәреү, ташлау, ырғытыу. *Таш менән ебәреү. Һауаға уҡ ебәреү.* ■ *Немец прожекторҙары беҙҙе күрҙе. Завод ҡоймаларына ауыр снарядтар ебәрә башланы.* Д. Юлтый. *[Новиков:] — Әллә үҙәм генә бер пуля ебәрәйемме? — [тине].* Д. Юлтый.

**10.** Шприц менән индереү (дарыуҙы һ. б.). *Ауырыуға ҡан ебәреү.* ■ *[Ауырыу балаларға] дарыуҙың уныһын ебәреп, быныһын еҫкәтеп, әнәләре менән дә тәненә дарыу ебәреп [торалар].* М. Тажи.

**11.** Бер урындан икенсе урынға күсереү, оҙатыу. *Складтан тауар ебәреү. Токтан иген ебәреү.* ■ *Кәбән ҡойғанда ул [Вәхит] күбә ебәреп торҙо.* М. Ғафури.

**12.** Нимәнеңдер төп үҙенсәлеген тәшкил иткән бер сифатын бөтөрөү, юҡ итеү. *Аштың бәрәкәтен ебәреү. Донъяның ҡәҙерен ебәреү. Мәжлестең күркен ебәреү. Өйҙөң котон ебәреү.* ■ *— Бер егет Ямалға ҡаршы килде,— ашағанда аппитетты ебәреп, үҙең белмәгәнде һөйләп ултырма әле.* М. Тажи.

**13.** *юкл. ф.* Ниндәйҙер насар эш өсөн яза күреү. *Кеше хаҡы ебәрмәй. Күҙ йәше ебәрмәй. Ҡарғыш ебәрмәй.* ■ *[Әсәйем:] «Бары ла беҙҙең күҙ йәше менән табылған малдар. Беҙҙең әсе тиребеҙ ебәрмәҫ, алла бирһә!» — тип үс ала ине.* Ғ. Минһажев.

**14.** Сығарыу (үҫентене, тамырҙы һ. б.). *Ағастар япраҡ ебәрҙе. Арыш баш ебәрҙе. Бөрө ебәреү. Ботаҡ ебәреү. Тамыр ебәреү.* — ■ *Тик шуныһы үкенесле бер аҙ — йәшел шыршы ҡорор, был майҙанда ебәрә алмаҫ инде тамырҙар.* М. Кәрим. / Үҫтереү (һаҡалды, мыйыҡты, сәсте). *Мыйыҡ ебәреү. Сәс ебәреү.* ■ *Килдебай электән үҙ ихтыярына ебәргән һаҡалын эйәк аҫтында ғына ҡалдырып ҡырған.* Ғ. Дәүләтшин. *[Гөлнур Сәғиҙәгә:] Сәсең дә мин белгәндәге кеүек түгел, толом ебәргәнһең икән. Былай бик килешле.* М. Тажи.

**15.** Ауырыу кәмеү, ауырыған кешенең хәле еңеләйеү, ауырттырыуҙан туҡтау. *Еҫ тейгәндә әҫе сәй эсһәң, башты ебәрә.*

**16.** Һөйләмдә әйтелгән төп фекерҙе кеүәтләп, ҙур ҡәнәғәтлек менән ризалыҡты белдереп әйтелә. *Мин тип кенә ебәрә ул.* ■ *Беҙҙең егеттәргә эш сыҙаймы ни ул, гөрләтәбеҙ,— тип кенә ебәрә [Солтанов].* Н. Мусин.

**17.** *-ып* формаһындағы хәл ҡылымға ҡушылып, ярҙамлыҡ ҡылым сифатында эш-хәлдең ҡапыл башланып китеүен белдергән ҡушма ҡылым яһай. *Йырлап ебәреү. Ҡысҡырып ебәреү.* ■ *Сыҙамлығын юғалтҡандай бурыл кешнәп ебәргәс, Зөлкәрнәй ҡапыл һиҫкәнеп, Зөлхизәһен ҡосағынан ысҡындырған..* Н. Иҙелбай. *Зәйнәп ҡапыл Сәйҙел беләгенә башын һалды, илап ебәрҙе.* Ғ. Сәләм.

**18.** *-ып* формаһындағы хәл ҡылымға ҡушылып, ярҙамлыҡ ҡылым сифатында берәй эш-хәлдең башланғыс алыуын белдергән ҡушма ҡылым яһай. *Башлап ебәреү. Ямғыр яуып ебәрҙе.* ■ *Тағы ла ныгыраҡ һыуытып ебәрҙе шикелле, аяҡ аҫтында ҡар шығырлауы әллә ҡайҙа яңғырап ишетелә.* Ш. Янбаев. *Урмандар, ҡырҙар өҫтөнән мөхәббәт уҙһа әгәр, .. һайрап ебәрә һандуғас, үйнаҡлап китә болан.* Р. Ниғмәти.

**19.** Ярҙамлыҡ ҡылым сифатында *-ып* формаһындағы төп ҡылымда белдерелгән эш-ҡылыҡҡа һоҡланыу, ҡәнәғәт булыу тойғоһо өҫтәй. *Клуб асып ебәреү. Кәләш алып ебәреү. Өй һалып ебәреү.* ■ *Тотош аҡтан кейенеп, билен көмөшлө ҡәмәр менән быуып ебәргән Аҙнағол..* З. Биишева. *Ҡаһарман .. үҙенә килешеп кенә торған яңы бостон костюм кейеп ебәргән.* М. Хәйҙәров.

**20.** *-ып* формаһындағы хәл ҡылымға ҡушылып, ярҙамлыҡ ҡылым сифатында эш-хәлдең тамам булыуын белдерә. *Биреп ебәреү. Ҡыуып ебәреү. Оҙатып ебәреү. Төшөрөп ебәреү. Ултыртып ебәреү.* ■ *Саҡырған ҡунағымды ҡайтарып ебәргәнсе, һеҙҙе лә [түрә ҡусты] бер талай ҡунаҡ итәйем .. тип килгәйнем.* Ғ. Дәүләтшин. *Гөлбаҙыянды кейәүгә биреп оҙатып ебәргәс тә, мине саҡырырһың [тине мулла]* Ғ. Сөләймәнов.

**21.** *-ып* формаһындағы тойғоно белдергән ҡылым менән килеп, ярҙамлыҡ ҡылым сифатында шул хис-тойғоно арттырыуҙы белдерә. *Дәртләндереп ебәреү. Маһайтып ебәреү.* ■ *Фәйзуллиндың «аҡыллы, тере» тигән һүҙҙәре мине дәртләндереп ебәрҙе.* С. Агиш.

◆ **[Аҫҡа] шыр ебәреү** ныҡ ҡурҡыу. *Яңы ҡоралдан берәрҙе борҡолдат[ҡанда], аҫтарына шыр ебәрер ине убырлы ҡарсыҡтар.* И. Ғиззәтуллин. **Хата ебәреү** *ҡар.* **хата** [2]. **[Эште] олоға ебәреү** берәй эш-хәлде ҡуйыртыу, уға етди төҫ биреү. *Эште олоға ебәрмәҫкә ине, келәттә етмәгән игенде бөгөн төндә уҡ ҡапларға кәрәк.* Б. Бикбай.

**ЕБӘРЕШЕҮ** *к. урт. ярҙамл. ҡар.* **ебәреү** 1.

**ЕБӘРТЕҮ** *к. йөкм. ҡар.* **ебәреү** 1—12, 17, 18, 20. *Ат ебәртеү. Кеше ебәртеү.*

**ЕВА́НГЕЛИЕ** [*рус.* ⟨ *гр.*] *и. ҡар.* **инжил.**

**ЕВГЕ́НИКА** [*рус.* ⟨ *гр.*] *и.* Кешенең нәҫел сифаттарының насарайыу мөмкинлеген алдан иҫкәртеү тураһындағы фән. *Евгеника фәне.*

**ЕВНУХ** [*рус.* ⟨ *гр.*] *и. ҡар.* **алашар.**

**ЕВРЕ́Й** *и.* Тарихи яҡтан сәмит телдәре төркөмөнөң иң боронғо халыҡтарының береһенә (боронғо еврейҙарға) ҡараған, хәҙерге көндә төрлө илдәрҙә шул илдәрҙәге төп халыҡтың

дөйөм тормошо менән йәшәгән халыҡтарҙың дөйөм этник исеме һәм шул халыҡтарҙың бер кешеһе; йәһуд. *Еврей теле. Еврей ҡатыны.*

**ЕВРОПАЛАШТЫРЫУ** *ҡ.* Европа үрнәгенә, ыңғайына (культура, ғөрөф-ғәҙәт һ. б.) үҙгәртеп ҡороу.

**ЕВРОПАЛАШЫУ** *ҡ.* Европа үрнәге, ғәҙәттәренә (төрлө йола, культура һ. б.) эйәреү.

**ЕВРОПАЛЫ** *с.* Европала йәшәгән йәки сығышы менән Европанан булған кеше; европа кешеһе.

**ЕВРОПЕО́ИД** [*рус.*] *и.*: **европеоид расаһы** аҡ йәки ҡара тәнлелек, йомшаҡ туры сәс, ҡыр танау, йоҡа ирен һ. б. сифаттар менән характерланған кешелектең төп ҙур бер расаһы.

**ЕГЕЛЕҮ** *ҡ.* **1.** *төш. ҡар.* егеү [1]. *Егелгән ат.*

**2.** Эшкә ныҡ тотоноу, ныҡлап эшләй башлау. *Егелеп эшләү. Эшкә егелеү.* ■ .. *Хәрби кеше күндәм була бит ул, бер нигә ҡарамай эшкә егелде.* Н. Мусин.

**ЕҒЕН** *с. диал. ҡар.* **екке** 1. *Еген мал. Еген үгеҙ. Еген ат.*

**ЕГЕНКЕ** *с. ҡар.* **екке** 1.

**ЕГЕРМЕ** *төп. һ.* 20 һаны. / Кем йәки нәмәнеңдер 20-гә тиң иҫәбе. *Егерме кеше. Егерме сакрым. Егерме көн. Егерме метр. Егерме һум.* ■ *Егерме йәш, йөҙ алтын: биләңә ҡылыс таҡтың, егерме биш биш алтын: башыңа аҡыл һалдың* (Ҡобайырҙан).

**ЕГЕРМЕЛЕ** *с.* Үлсәме егерме берәмеккә тиң. *Егермеле ойоҡ.* ■ *Хәмит мулла бөгөн өйөн .. егермеле лампа яндырып балҡытҡан.* А. Таһиров.

**ЕГЕРМЕЛӘГӘН** *сама һ.* Егерме тирәһе, егермегә яҡын. *Егермеләгән кеше. Егермеләгән ауыл. Егермеләгән ат.* ■ *Егермеләгән командирҙарҙың бөтәһе лә штабҡа килеп тулдылар. Ҡыҙыл Армиянан килгән планды өҫтәлгә йәйеп һалып, бөтәһе лә шуның өҫтөнә эйелделәр.* Һ. Дәүләтшина.

**ЕГЕРМЕЛӘП** *сама һ.* Егерме тирәһе, егермегә яҡын. *Егермеләп эшсе. Егермеләп көн.* ■ *Тап шул мәлдә генә ишектән Өмөтбай, Ишдәүләт, Әлгәҙе комсомолдар — барлығы егермеләп кеше килеп инде.* Һ. Дәүләтшин.

**ЕГЕРМЕНСЕ** *рәт һ.* Урын тәртибе 20 менән билдәләнгән. *Егерменсе кеше. Егерменсе йорт. Егерменсе йәш.* ■ *Һеҙ Килдебай ҡустының күп игелеген белмәйһегеҙ әле. Егерменсе йылда ла, аслыҡ йылында ла беҙгә күп файҙаһы тейҙе.* Ғ. Дәүләтшин.

**ЕГЕРМЕШӘР** *бүл. һ.* Һәр бере егермегә тиң. *Егермешәр уҡыусы. Егермешәр һум. Егермешәрҙән бүлеү.*

**Е́ГЕРЬ** [*рус.* ⟨*нем.*] *и.* **1.** Профессиональ һунарсы. *Егерь булып эшләү.* ■ *Кейектәрҙе ҡырылыуҙан һаҡлап алып ҡалыу өсөн районда кәмендә өс дәүләт егере тотоу талап ителә.* «Совет Башҡортостаны», 1971, 16 ғинуар.

**2.** *иҫк.* Ҡайһы бер Европа илдәрендә уҡсылар (атлы һәм пехота) полкында хеҙмәт иткән һалдат. *Егерҙар полкы.*

**ЕГЕТ** *и.* **1.** Бала йәшенән сыҡҡан, өлгөргәнлек осорона еткән, әлегә өйләнмәгән ир кеше. *Батыр егет. Йәш егет. Егет булыу. Дәртле егет.* // *Егет кеше. Егет саҡ.* / Йәш ир, ғөмүмән ир кеше. *Батыр ғына егет ил күрке. Батыр ғына егет булмағанда, был илдәрҙең беҙгә ни күрке* (Халыҡ йырынан). / Ҡыҙҙың һөйөп йөрөгән кешеһе. *Һөйгән егет. Йөрөгән егет.* ■ *Пассажирҙар бара, кемдер берәү яулыҡ болғап моңһоу ҡараны. Бәлки уның егете лә минең кеүек баҫып ҡалғандыр...* Ғ. Сәләм. *Һөйөп кенә йөрөгән егетеңдән, Ҡарасәскәй, тороп ҡалдыңмы?* (Халыҡ йырынан).

**2.** *күсм.* Батырлыҡ, ҡыйыулыҡ, уңғанлыҡ һымаҡ ирҙәргә хас ыңғай сифаттарға эйә булған шәп кеше; ир. *Егет кеше. Егет булыу.* ■ *Үҙе йәш булыуға ҡарамай бөтә ауылды тотоп торған егеттең һүҙен ни эшләп аяҡ аҫтына һалаһың!* Ғ. Дәүләтшин. *Ирмен тигән егеттең әйтер һүҙе хаҡ булыр, күңеле уның аҡ булыр* (Ҡобайырҙан). *Бүгәсәү ҙә менән ай Салауат Рәсәйҙең данлы егете* (Халыҡ йырынан). / Шундай кешеләрҙе ҙурлап, маҡтап, хуплап әйткән һүҙ *[Бабай:] Ай, афарин, улым! Илдә бер егет икәнһең.* Һ. Дәүләтшина.

◆ **Егет ҡорона инеү** *шул уҡ* **ир ҡорона инеү** (*ҡар.* **ир**). **Кейәү егет** *ҡар.* **кейәү.**

● *Аттың яҡшыһы алға сыға, егеттең яҡшыһы данға сыға.* Әйтем. *Ат тешенән, егет эшенән билдәле.* Әйтем. *Егет булһаң, ер күк бул — ер ауырлыҡ күтәрә* (егет кеше тормошта осраған төрлө ауырлыҡтарҙы күтәрә, баш эймәй тигән мәғәнәләге әйтем). *Егет кеше — бер кеше, арыҫланға тиң кеше.* Мәҡәл. *Егет кешегә етмеш төрлө һөнәр ҙә әҙ.* Мәҡәл. *Егет һүҙе бер булыр.* Әйтем.

**ЕГЕТ-ЕЛКЕНСӘК** *и. ҡар.* **егет-елән.**

**ЕГЕТ-ЕЛӘН** *и. йыйн.* Егеттәр. *Бәхет яулап сыҡҡан егет-елән, елкендергән ярлы-япандар. Сыҙамаған улар хурлыҡтарға, баяр, фабрикант-тар тапауға.* С. Кулибай.

**ЕГЕТЛЕК** *и.* **1.** Егет булыу осоро, егет саҡ. *Егетлек дәүере. Егетлек осоро.* ■ .. *Ҡаҙаҡтар әйтмешләй, тормоштоң «буз баласыдыҡ», беҙҙеңсә әйткәндә, егетлек, ҡыҙлыҡ дәүере була бит.* Т. Йәнәби.

**2.** Ысын ирҙәргә хас булған батырлыҡ, уңғанлыҡ, тоғролоҡ, тәүәкәллек (һ. б. ыңғай сифаттар). *Егетлек күрһәтеү. Егетлек эшләү.* ■ *Был китап Совет Башҡортостаны батырҙарының юғары мораль көсө, .. ныҡлығына, егетлегенә һәм ҡаһарманлығы, Социалистик Ватанға .. ысын күңелдән бирелгәнлектәре тураһында.* Ә. Ихсан. .. *Вәғәҙә бирҙеңме — үтә. Егетлек бына шунда.* Ә. Бикчәнтәев.

● *Егетлек ерҙә ятып ҡалмаҫ.* Мәҡәл. *Мәрәйлектә — мәргәнлек ирке, мәргәнлектә — егетлек күрке.* Мәҡәл.

**ЕГЕТЛӘНЕҮ** *ҡ.* **1.** Егеттәрсә, егеттәр һымаҡ ҡыланыу. *Егетләнеп китә.*

**2.** *күсм. һөйл.* Эсеп, ҡыҙмаса булыу. *Хафиз ағай әҙерәк егетләнеп алған.* М. Тажи.

**ЕГЕТТӘРСӘ** *р.* **1.** Егеттәрсә, йәштәргә хас булғанса (үҙ-үҙеңде тотоу һ. б.). *Егеттәрсә ҡыланыу. Егеттәрсә елкенеү.*

**2.** *күсм.* Батырҙарса, ҡыйыу, ҡурҡыуһыҙ, егет кешеләргә хас дәрт менән. *Егеттәрсә ныҡ*

*булыу. Үҙенҙе егеттәрсә тотоу.* ■ *Ул [Ярцев] үҙенең яңы хеҙмәтенең бөтә ауырлығын, мәшәкәтен һәм яуаплылығын егеттәрсә сыҙамлы елкәһенә тейәне.* К. Мәргән.

**ЕГЕТ-УЛАҠ** *и. йыйн.* Егеттәр. *[Киленгә] егет-улаҡ барыһы ла еңгә тип һүҙ куша, .. үҙебеҙҙең гәҙәт бит, уйнатып, әңгәмәләгәндәре лә була.* Т. Хәйбуллин.

**ЕГЕТ-УЛАН** *и. йыйн.* Егеттәр. *Егет-улан барыһы ат менеп, бүре һуғырға сыҡҡан* (Әкиәттән).

**ЕГЕҮ**[1] *ҡ.* **1.** Һөйрәтеү, тарттырыу өсөн екке малға арба, сана һ. б. тағыу. *Ат егеү. Үгеҙ егеү. Арбаға егеү. Һабанга егеү. Оҫҡа егеү. Барлап егеү. Төпкә егеү. Теркәп егеү. Сыбаталап егеү.* ■ *Халыҡ ураҡ-салғы ҡулға алды, аттар егеп, урам тултырып сабып, берәм-берәм эшкә ҡуҙғалды.* Ғ. Амантай.

**2.** *күсм.* Эшкә ҡушыу; ныҡ эшләтеү. *Бөтә көстө егеү. Зиһенде егеү. Техниканы егеү. Колхозда электр көсөн бик күп эшкә егәләр.* ■ *...Һәләтле кешене бер ауыл уҡытыусыһы итеп кенә тотоу .. етәкселәр өсөн бәләкәй эш һымаҡ тойолдо һәм уны [Тимерҙе] ауырыраҡ йөккә егергә теләп волость башкарма комитеты председателе итеп ҡуйҙылар.* Б. Бикбай. *Бигерәк иртә уның балалығын эшкә екте һуғыш йылдары.* Р. Сафин.

● *Бәләкәй атты маҡта, оло атты ек.* Әйтем.

**ЕГЕҮ**[2] *и. һөйл.* Еккәндә ҡулланылған бөтә нәмә (ҡамыт-дуға, арба-сана һ. б.). *Егеүе менән бер ат алыу.*

**ЕГЕҮЛЕ** *с.* Нимәгәлер егелгән. *Егеүле ат.* ■ *[Тайфуров] ҡырт ҡына боролоп йүгерә--атлай урам буйлап китеп барҙы. Бер аҙҙан егеүле аттар килеп етте.* М. Тажи.

**ЕГЕШЕҮ** *ҡ. урт. ярҙамл. ҡар.* **егеү**[1]. *Ат егешеү.*

**ЕГИПЕТЛЫ** *и.* Египетта [Мысырҙа] йәшәүсе ғәрәптәрҙән торған төп халыҡ һәм шул халыҡтың бер кешеһе. *Боронго египетлылар йылганы ата тип, ә ерҙе әсә тип иҫәпләгән.* З. Хисмәтуллин.

**ЕГИПТО́ЛОГ** [*рус.*] *и.* Египтология буйынса белгес.

**ЕГИПТОЛО́ГИЯ** [*рус.*] *и.* Боронғо Египеттың (Мысырҙың) тарихын, экономикаһын, телен, сәнғәтен һ. б. өйрәнә торған фәндәр йыйылмаһы.

**ЕГӘН** *и. диал.* Екән.

**ЕГӘР** *и.* **1.** Эш һөйөүсәнлек, эшкә уңғанлыҡ. *Егәре бар кеше. Егәр күрһәтеү.*

**2.** Көс, ҡеүәт. *Егәрҙән тайыу.* ■ *Үҙен-үҙе тынысландырырға бөтә егәрен һалып тырышкан Төхвәт.* И. Көҫәпҡол. *Йән ереккән ергә аяҡ баҫҡас, егәрҙәрем арта електә.* Х. Назаров.

● *Атҡа егәре етмәгән тәртәне туҡмаған.* Мәҡәл. *Егәре бар ир йотта ла йүгәнен тотоп калмаҫ.* Мәҡәл. *Егет егәр, ҡыҙ сибәр булһын.* Мәҡәл.

**ЕГӘРЛЕ** *с.* **1.** Эш һөйөүсән, эшкә уңған, булдыҡлы. *Егәрле кеше. Егәрле булыу.* ■ *Ул [Хәҙисә апай] .. актив йәмәгәт эшсеһе. Ғаиләлә хәстәрле, егәрле әсә, аҡыллы хужа ҡатын. Күпме йөк, күпме бурыс!..* З. Биишева. *Килен һәйбәт, егәрле. Бөтә өй эшенә өлгөрөп тора.* Һ. Дәүләтшина.

**2.** Көслө, ныҡлы. *Туптай егәрле булып үҫеп килгән Ғизулла уләндә аунап, уйнап йөрөй.* Я. Вәлиев.

● *Егәрленең ҡулы ете.* Әйтем. *Егәрленең еңе туҙа, ялҡауҙың итәге туҙа.* Әйтем. *Ялҡауға ял, егәрлегә бал.* Әйтем.

**ЕГӘРЛЕК** *и.* Эш һөйөүсәнлек, эште шәп, һәйбәт эшләү мөмкинлеге, эшкә уңғанлыҡ. *Барыһы ла үҙенең егәрлеген күрһәтергә теләй.* Б. Бикбай.

**ЕГӘРЛӘНДЕРЕҮ** *ҡ.* Эшкә дәртләндереп ебәреү, егәрле итеү. *Егәрләндереп ебәреү.* ■ *Кәйеф кисәгегә ҡарағанда ла күтәренкерәк булып сыҡты. .. Был хәл мине егәрләндереп ебәргәндәй булды.* С. Ҡудаш.

**ЕГӘРЛӘНЕҮ** *ҡ.* **1.** Эшкә дәртләнеү, уңғаланыу, егәрле булып китеү. *Медпунктты ҡараусы Бибисара апай ҙа яулығын шаҡара бәйләп, күлдәк итәктәрен бөрмәһенә ҡыҫтырып, егәрләнеп йөрөй.* Ш. Янбаев.

**2.** Көслө, ныҡлыға әйләнеү.

**ЕГӘРҺЕҘ** *с.* **1.** Эшкә уңмаған; ялҡау. *Йәш бала бит, өйрәнер әле, тип [әбей] килененең гәмһеҙ, егәрһеҙ булыуына иғтибар итмәне.* Х. Зарипов.

**2.** Көсһөҙ, кәрһеҙ. *Хаимов арыҡ, егәрһеҙ, ун аҙым ерҙе ҡапылыраҡ йөрөһә, тыны бөтө.* А. Таһиров.

**ЕҘ** *и.* Ҡурғаш ҡушылған баҡыр иретмәһе. *Еҙҙән эшләнгән нәмә. // Еҙ батмус. Еҙ дага. Еҙ ҡурай. Еҙ комган. Еҙ ҡыңғырау. Еҙ самауыр борлап ҡайнаган.* М. Хәй. *Салауат батырҙың да ай ҡоралы еҙ башаҡлы гына уҡ икән* (Халыҡ йырынан).

♦ **Еҙ ағасы** *диал.* энәлек.

**ЕҘБАШ** *и. диал.* Туҙбаш.

**ЕҘҒОРТ** *и.* Һары йылтыр ҡарышлауыҡ рәүешендәге иген ҡоротҡосо. *Иген сәсеүлектәренә бигерәк тә еҙгорт ҙур зыян килтерә.*

**ЕҘЕ** *и. диал.* Еле.

**ЕҘЕКӘЙ** *и. шул уҡ* **шыма көпшә** (*ҡар.* **көпшә**).

**ЕҘЛЕ** *с.* Еҙ менән биҙәлгән. *Еҙле ҡамыт.*

**ЕҘЛӘҮ** *ҡ.* Еҙ менән биҙәү. *Ерән атҡа еҙ килешмәҫ, еҙләмә йүгәнеңде* (Халыҡ йырынан). / Еҙ ялатыу.

**ЕҘМЫЙЫҠ** *и.* Һаҙандар ғаиләһенә ҡараған тәңкәһеҙ ваҡ йылға балығы.

**ЕҘНӘ** *и.* Үҙенән оло ҡыҙ туғандың ире һәм уға өндәшеү һүҙе; еҙнәй. *Еҙнә булыу. // Еҙнә кеше.* ■ *Ныязголдоң Ҡотлобайға олатай түгел, ҡарт булһа ла, бәке бирергә тейеш булган еҙнә икәнен аныҡлап ҡуйҙылар.* Һ. Дәүләтшина. **Еҙнә аҡсаһы** еҙнә булған кешенең балдыҙҙарына өләшкән аҡсаһы.

**ЕҘНӘЙ** *и. ҡар.* **еҙнә.**

**ЕҘСЕ** *и.* Еҙ менән эш иткән кеше; еҙ оҫтаһы. *Еҙсе һөнәре.*

**ЕҘӘЙ** *и. диал.* Энәлек. *Еҙәй ағасы. Еҙәй энәһе. Еҙәй сәскәһе.* ■ .. *Йәнештең табанына еҙәй энәһе ҡаҙалып ҡуйҙы.* З. Биишева.

**ЕЙ** *и.* Тире ебетә торған әсе матдә (эркет, көрпә һ. б. ҡушып яһалған шыйыҡлыҡ). *Тирене ейгә һалыу.*

□ **Ей булыу** әсеп йомшарыу (тирегә ҡарата). *Йәш тире тиҙ ей була.*

♦ **Ейгә килеү** ыңғайға килеү; күнеү. *Шул кирелегеңде ташларға вакыт инде, атаhы.. Исмаhам, үлгәндә ейгә килеп үлергә кәрәк.* И. Насыри.

● *Ала куңыҙ тиреhе ейгә күнмәҫ.* Мәҡәл.

**ЕЙҘЕРЕҮ** *ҡ.* Ейергә, ашарға мәжбүр итеү, ейергә ирек ҡуйыу; ашатыу. *Аш ейҙереү.*

**ЕЙЕЛЕҮ** *ҡ. төш. ҡар.* **ейеү**[1]. *Башка ерҙә ашым ейелмәҫ, башка ергә башым эйелмәҫ!* Р. Ғарипов.

**ЕЙЕТЕҮ** *ҡ.* Ейгә hалып ебетеү, йомшатыу. *Тирене ейетеү.*

**ЕЙЕҮ**[1] (ей*г*) *ҡ.* **1.** Ризыҡ ҡабул итеү; ашау. *Сиңерткәләр иген ейер, .. такыя башлы буҙ тургай сиңерткәнең үҙен ейер* (Ҡобайырҙан).

**2.** *күсм.* Үҙеңә алыу; үҙләштереү. *Кеше хакын ейеү.*

● *Якшылык кылган аш ейгән, яманлык кылган таш ейгән.* Мәҡәл. *Түҙгән түш ейгән.* Мәҡәл. *Еймә кеше миннәтен, ей кулыңдың хеҙмәтен.* Мәҡәл.

**ЕЙЕҮ**[2] (ейе*г*) *ҡ.* **1.** Ебеп йомшарыу. *Иләнмәгән тире ямгырҙа ейей.*

**2.** Ейҙә ебеп, йөнө йолоу (тирегә ҡарата). *Ейегән тире. Тоҙлап куйган сей тире якшы ейей.*

**ЕЙМӘ** *и.* Тирегә (күберәк биткә) ҡара ҡыҙыл төйөр-төйөр булып сыға торған тире туберкулёзының бер төрө.

**ЕЙӘК** *и.* Күлдәк яғаhын ҡаушырып бәйләү өсөн махсус эшләнгән тар бау. *Иҙеү бәйләргә ейәк тагыу. Ҡатмар ситенә ейәк баҫыу.* / Күлдәктең итәк осона h. б. тағыла торған таҫма hымаҡ тар бау. *Ейәк баҫыу.* ■ *Күлдәккә өс-дүртәр итәк ос таҫма куйып, ситенә ейәк баҫа инек.*

**ЕЙӘКЛЕ** *с.* **1.** Ейәк ҡуйылған, ейәк ҡуйып тегелгән. *Ейәкле иҙеү. Ейәкле булыу.*

**2.** *күсм.* Сер hаҡлаусан; тотанаҡлы. *Ейәкле кеше.*

**ЕЙӘКҺЕҘ** *с.* **1.** Ейәк ҡуйыуhыҙ. *Ейәкhеҙ ыштан. Ейәкhеҙ булыу.*

**2.** *күсм.* Сер hаҡлай белмәүсән; тотанаҡhыҙ. *Ул ейәкhеҙгә hөйләгәнсә, [hүҙҙе] елгә hөйләгән артыгырак.* Т. Морат.

**ЕЙӘН** *и.* **1.** Ситкә төшкән ҡатын-ҡыҙҙың балаhы (әсәhенең ауылдаштарына ҡарата). // *Ейән кыҙ. Ейән ул. Ейән кусты. Ейән hеңле.* ■ *Һин, кустым, миңә ейән кусты булаhың. Һинең әсәйең менән минең әсәйем — Һәтекәйҙең ике улынан тыуган кыҙҙар.* Ғ. Дәүләтшин. .. *Олатайҙар йәш сакта, ейән улдар баш сакта, бер ауылда йәшәгән, ти, бер бай* (Әкиәттән). **Ейән ауыл** әсәйҙең тыуған ауылы. *Аҡназар үҙенең ейән ауылына барып, бер агаhы менән hунарга сыга* (Әкиәттән).

**2.** Ҡыҙыңдың йәки улыңдың улы. // *Ейән кыҙ. Ейән ул.* ■ *Батырҙар араhында иң атаклыларынан hаналган Килмәттең ейәне Көтөр исемле батыр була* (Әкиәттән).

**ЕЙӘНСӘ** *и. ҡар.* **ейәнсәр.** *Мәхмүт агай ... ишекте аскайны, балалар баксаhына йөрөгән ейәнсәhе Гүзәл килгән икән.* С. Агиш. *[Әбей:] Куккүҙ исемле көслө батыр кыҙ — ул минең ейәнсәм була, ти* (Әкиәттән).

**ЕЙӘНСӘР** *и.* Ҡыҙыңдың йәки улыңдың ҡыҙы; ейәнсә. *Әгәр баш балалары торган булhа, картайган көндәрендә Мәгфиә әбей ҙә яңгыҙ булмаҫ, ейән, ейәнсәрҙәре тыпырлап йөрөрҙәр ... ине.* Б. Бикбай. *Зөлхизә йырлай. Уның [Юламан карттың] ейәнсәре — берҙән-бере ... картатаhының йөрәген телемдәргә телгеләй торган, шундай йыр уйлап сыгарган хәҙер.* З. Биишева.

**ЕК**[1] *и.* Үҙ-ара тығыҙ яткан бүрәнә, таҡта, таш h. б. нәмәләр араhындағы тар асыҡлыҡ. *Бүрәнә еге. Иҙән еге. Өрлөк еге. Таш еге. Екhеҙ итеп эшләү. Еккә кыҫтырыу.* ■ *Ҡунай тәҙрә капкасының егенән байҙаң утары эсен күҙәтә башланы* (Әкиәттән). **Ер еге** ерҙең ярылған урыны, ерҙең ярығы. *Бер боролошта Саука шишмәhе капыл юк була. Бакhаң, ер егенә инеп китә икән.* «Совет Башҡортостаны», 1980, 12 сентябрь. **Тау еге** тар ғына ике тау араhы; тар үҙәк. *Һукмак уларҙы [юлаусыларҙы] сылтырап шишмә сыгып яткан тау егенә килтерҙе.* Й. Солтанов.

**ЕК**[2] *и.* Бысраҡ, ерәнес нәмә. *Егәрлем, ти миңә ерем, дошманым, ти миңә ек.* Р. Ғарипов.

♦ **Ек күреү** hөйкөмhөҙ, насарға hанау, ят күреү.— *Атайым үлгәс тә Сарыбай булган дуҫлыгын онотоп, мине ек күрә башланы.* «Ҡуҙыйкүрпәс менән Маянhылыу». **Ек күремесе** ҡәҙерhеҙ, hөйкөмhөҙ, hөймәлекhеҙ, эшәке, кеше яратмаған. *Ек күремесе булыу.* ■ *[Әбей бабайга:] Вәй, гүмерҙәр, иҫкән ел кеүек олагып торалар. Инде икәүебеҙ ҙә бергә үләйек, бер-беребеҙҙән калып, етем калып, әҙәмгә ек күремесе булмайык..* Т. Хәйбуллин.

**ЕКЕРЕНЕҮ** *ҡ.* Асыуланып ҡысҡырыныу. *Ҡаршы екеренеү. Нык екеренеү.* ■ *— Карт көнөмдә битемә кара якты, мир алдында рисуай итте, бәдбәхет кыҙыкай! Ух!.. — тип екеренгән асыуы кабарган Ологатай.* Н. Иҙелбай. *Байҙың екеренеүенән курккан бала-сага әсәләренең итәктәренә куҙҙәрен йәшерә..* Я. Хамматов.

**ЕКЕРЕНЕҮ-БАҠЫРЫНЫУ** *ҡ. hөйл.* Көслө ҡысҡырыныу, асыуланып нык әрләп ҡысҡырыныу. *[Халык Баймөхәмәттәргә:] .. Атаhы булhа, атаhы.. Улы булhа, улы! Унда ла бында ла екеренеп тә бакырынып, куркытып өйрәнгәндәр.* И. Насыри.

**ЕКЕРЕҮ** *ҡ.* Асыуланып ҡысҡырыу. *Екереп өндәшеү.* ■ *Һелтәп [Вәли] таягын hеңлеhенә екерә. Шулай кыскырып тамагын карлыктырып бөтөрә.* Ғ. Әмири.

**ЕКЕРТЕҮ** *ҡ.* Асыуланып, ҡысҡырып, тупаҫ өндәшеү. *Кешене екертеп куркытыу. Һин мине екертмә.* ■ *Яман кеше шул булыр, берәү тороп hүҙ әйтhә, куркытам, тип екертер .. яганан алып hиңкетер* (Ҡобайырҙан).

**ЕККЕ** *с.* **1.** Егеп йөрөй торған, эшкә егә торған. *Екке мал. Екке үгеҙ.* ■ *Йылкынан да мәшәкәтhеҙ мал юк. Йәйен hимереп ныгынhа, кышын тибендә йөрөп булhа ла тамак аҫрай. Хужа екке аттар өсөн генә бесән әҙерләй.* Я. Хамматов.

**2.** *и. мәг.* Егеп йөрөтөлгән хәл. *Еккегә ярау. Еккегә өйрәтеү. Еккелә йөрөү.* ■ *Ҡар төшкәс, йәш айгырҙы еккегә өйрәтәләр.* Р. Солтангәрәев.

**ЕККЕЛӘҮ** *к.* **1.** Һирәк-һаяҡ егеү. *Ҡайһы саҡ ат та еккеләйбеҙ.*

**2.** Ҡабаланмай ғына, яйлап егеү. *Былай ҙа беҙ сәй эсеп, ат еккеләгәнсе, ҡояш ныҡ күтәрелергә өлгөргәйне инде.* Д. Исламов.

**ЕККЕТ** *и. диал.* Екәт. *Ҡибланан иҫкән еккет елгә, шау-шыу итә Боғаҙаҡ ҡамышы* (Халыҡ йырынан).

**ЕКЛЕ** *с.* Еге бар, еге булған. *Екле бүрәнә. Иҙән екле булған, насар йәйгәндәр.*

**ЕКЛӘНЕҮ** *к.* Ек барлыҡҡа килеү, еклегә әйләнеү, екле булыу. *Ишек екләнгән. Иҙән екләнгән.*

**ЕКЛӘҮ** [1] *к.* **1.** Ек яһау, екле итеү.

**2.** *диал. ҡар.* **һыҙлыҡлау** [1].

**ЕКЛӘҮ** [2] *и. диал. ҡар.* **үҙәк** 5. *Сусаҡ тауҙар екләүендә, сал Йәнгүҙәй битләүендә өйкөм-ҡыҙрым сауҡалар.* А. Игебаев.

**ЕКРӘЙЕҮ** *к.* Кешегә асыулы, уҫал, яман итеп ҡарау.

● *Иҫле һөйләшкән бәләнән ҡотолған, екрәйгән етмеш бәләгә тарыған.* Мәҡәл.

**ЕКТЕРЕҮ** *к. йөкм. ҡар.* **егеү** [1]. *Ат ектереү.* ■ *Йәшел генә сана, зәңгәр дуға ектерһәнә, Фатимам, туры атҡа* (Халыҡ йырынан).

**ЕКҺЕНДЕРЕҮ** *к.* Ек күрерлек, биҙерлек итеп йөҙәтеү. *Бер төрлө аш екһендерә.*

**ЕКҺЕНЕҮ** *к.* **1.** Артыҡ күреү, ят, һөйкөмһөҙ һанау.— *Ҡыҙым, мин үҙ баламды, ниндәй генә гәрип булһа ла, екһенмәм, бауырыма баҫырмын.* Ш. Янбаев.

**2.** Күрге килмәй башлау; ялҡыу, йөҙәү. *Гел бер төрлө аштан екһенеп киттем.* / Ҡыйын күреү; ялҡыу. *Кис ултыра шулай урағыттар, эш эшләүҙән бер ҙә екһенмәй.* Т. Йәнәби.

**3.** *эйһ. ф. ҡар.* **екһеү.** *Яңғыҙлыҡ екһендерә. Ситтә екһендерҙе.*

**ЕКҺЕТЕҮ** *к.* Тамам биҙҙереү, ныҡ йөҙәтеү. *Һары май екһетте.* ■ *[Оморҙаҡ:] Тик ятыу бик екһетте бит әле, бай ағай. Берәй төрлө эш булмаҫмы?* (Әкиәттән).

**ЕКҺЕҮ** *к.* Нимәнәндер ялҡып китеү, икенсе күрмәҫтәй булып биҙеү. *Бер-береңдән екһеү. Екһеп китеү.* / Ашай алмаҫ булып йөҙәү. *Ит менән картуфтан кеше екһемәй.* / Гел бер төрлө эш-хәлдән ялҡыу. *Юл йөрөүҙән екһеү.*

**ЕКӘН** *и.* Күрән һымаҡтар ғаиләһенә ҡараған, көрән, оҙонса башлы ялпаҡ күл ҡамышы төрө. *Айлы күлдең тыныс һыуҙарында билдән батып үҫә күк екән.* Ҡ. Даян. / Шул ҡамыштың йөнтәҫ, туҡмаҡ һымаҡ башы. *Екән башлы ҡамыш.* ■ *Эҫем буйкайында һары ҡамыш, екән генә буйы бер ҡарыш* (Халыҡ йырынан). *Ҡарсыганан ҡасҡан һуна өйрәк толҡа тапмаҫ екән ҡамышһыҙ* (Халыҡ йырынан).

◆ **Екән сәскә** *диал.* томбойоҡ. *Күлдең икенсе яғындараҡ, һыу өҫтөндә .. балалар йоҙрого һымаҡ ҡына һап-һары екән сәскәләре үҫеп ултыра.* Ғ. Ибраһимов. **Екән үләне** *диал.* мамыҡбаш. *Яланды екән үләне баҫҡан!* М. Тажи.

● *Ерле ере менән, екән күле менән.* Мәҡәл.

**ЕКӘТ** *с.* Әкрен, йомшаҡ, талғын (елгә ҡарата). *Екәт кенә, екәт әй ел үтә Агиҙелкәйҙәргә еткәнсә* (Халыҡ йырынан).

◆ **Екәт буран** *диал.* Һепертмә буран (*ҡар.* **буран** 1).

**ЕЛ** *и.* **1.** Һауа ағымының горизонталь йүнәлештәге хәрәкәте. *Йомшаҡ ел. Талғын ел. Ҡаты ел. Әсе ел. Көҙгө ел. Ел ыңғайы. Елгә ҡаршы. Ел баҫылыу. Ел сығыу. Ел өрөү.* ■ *Ел көсәйгәндән-көсәйә, шомло тауыш сығарып мөрйәләрҙә олой.* Ә. Вәли. **Ҡара ел** көҙгө әсе ел. *Үҙәктәргә үтеп, ҡара төндә ҡара елдәр выжлап уйнаны.* Т. Йәнәби. **Ҡул еле** *һөйл.* эшләр эш өсөн алдан бирелгән бер өлөш хаҡ. *Сәхипгәрәй уға [муллаға] ҡул еле тип, утыҙлыҡ ҡыҙыл акса тоттторҙо ла: «Ысын әжере никах ваҡытында булыр»,— тине.* И. Ғиззәтуллин. **Саба еле** *ҡар.* **саба** [2]. **Үтә ел** ишек, тәҙрә һ. б. үтәнән-үтә өргән ел. *Бүлмәне үтә ел менән елләтеү.* **Япраҡ еле** ағастар япраҡ ярған ваҡытта була торған һалҡын ел. *Япраҡ еле килеп сәләм биргәс, япраҡ ярҙы ағас бөрөләре.* Б. Вәлит. / Ниҙеңдер етеҙ хәрәкәтенән ҡупҡан һауа тулҡыны. *Ат еле. Машина еле.* ■ *Ат еленә арҡа ҡуйып юлсы гәмһеҙ ҡарап бара.* М. Кәрим. *Сәмрегош осоп китте, ти. Айыуғолаҡ уның еленә күтәрелеп-күтәрелеп ҡалды, ти* (Әкиәттән).

**2.** *күсм.* Нимәнеңдер көслө тәьҫире, йоғонтоһо; шауҡым. *Замана еле. Йәшлек еле.* ■ *Аҡ офицер уның [Мусакайҙың] уң янбашына дағалы итек менән бик ҡаты типкәйне. Ул быны йәшлек еле менән генә һиҙмәй йөрөгән икән.* Б. Бикбай. *Ғаяз бай ҙа, уның балалары ла ауылда тыныс яталар. Уларға һуғыш еле .. ҡағылғаны юҡ.* Д. Юлтый.

◆ **Ауыҙыңдан ел алһын** (*йәки* **алғыры**)! *ҡар.* **ауыҙ.** *[Килене:] — Гөлйөҙөм әллә ҡайҙа булған тим, ҡәйнәм! — Уй, хоҙайым, ауыҙыңдан ел алғыры! Бар, ҡара, ҡайҙа булһын ул?!* Һ. Дәүләтшина. **Бәхетһеҙгә** (*йәки* **хәйерсегә**) **ел ҡаршы** нәмәлер эшләгәндә көтмәгән бер ҡаршылыҡҡа осрағанда әйтелә. *[Нәжми ағай] бер тай алғайны, хәйерсегә ел ҡаршы тигәндәй, ул да үлеп китте .., тағы өмөттәр бушҡа сыҡты.* А. Карнай. **Ел алдымы ни** *йәки* **ел алғандай** нимәлер ҡапыл юҡҡа сыҡҡанда, юҡ булғанда әйтелә. **Елдән булған** атаһыҙ тыуған. *[Нафиков Банатҡа:] Ул [ҡулдағы] бала елдән килгәнме ни?* Й. Гәрәй. **Елгә еленләп, боҙға быҙаулау** бәләкәй нәмәне ҙур яһап, юҡҡа, барға шаулап йөрөгән кешегә ҡарата әйтелә. *[Мәмәтәй:] Һин, Шафиҡ ҡустым, елгә еленләп, боҙға быҙаулап йөрөмә. Үҙемә казначей итеп алам, .. иртәгә идараға кил.* Ғ. Сөләймәнов. **Ел ашау** елгә ярылыу (бит, ҡулға ҡарата). **Елгә китеү** (*йәки* **осоу**) бушҡа сығыу. *Ғәзиз ғүмерем минуттары гелән генә елгә киткән.* М. Ғафури. **Елдән килеү** анһат юл менән, буштан килеү. **Ел етмәҫ** бик етеҙ. *Заятүләк өс тапҡыр һуға, күк дүнән ел етмәҫ толпар булып осортоп алып та китә.* «Заятүләк менән Һыуһылыу». **Ел етмәҫ** *шиғр.* бик алыҫ (ер тураһында). *Ел, Ерәнем, егетеңде еткер ел етмәҫ ергә.* Н. Иҙелбай. **Ел[дәр] иҫеү** бер нәмә лә ҡалмау, юҡ булыу. *Кире әйләнеп килгәндә машинанан елдәр иҫкән ине.* Д. Исламов. **Ел кеүек** *йәки* **елдәй** бик тиҙ, ҡыҙыу, етеҙ (йөрөү, хәрәкәт итеү һәм ғүмер үтеү тураһында). *Елдәй елеү. Ел кеүек осоу.* ■ *Ғүмер елдәй*

*үтеп тора, бер йәй була, бер яҙ була.* Т. Арслан. *Үтеп кенә барған был гүмер иртән генә өргән ел кеүек* (Халыҡ йырынан). **Ел йотоу** (*йәки* **уртлау, эсеү**) һыуыҡта, елдә өшөп, йонсоп йөрөү. *Ел уртлап килеүем бушка булды.* ■ *[Сурагол:] Урман йырып, ил үтеп, ел йотоп, .. туғандарымдың кәҙерен һаҡлап, кәберҙәренә бер ус ҡына булһа ла тупраҡ һалайым тип килгәйнем.* Т. Хәйбуллин. **Ел ҡағылыу** (*йәки* **тейеү**) дини хөрәфәт буйынса, насар шауҡым тейеп ауырыу. *Балаға ел ҡағылған.* **Ел ҡанатлы** *ҡар.* **ҡанатлы. Ел ҡапҡа** *ҡар.* **ҡапҡа 1. Ел ҡултыҡ** *ҡар.* **ҡултыҡ. Ел ҡыуыу** *ҡар.* **ҡыуыу. Ел тейməç ерәнсә** *ҡар.* **ерәнсә. Ел тирмәне** *ҡар.* **тирмән. Ел тоҡсайы** *диал.* екән. **Ел уйнау** 1) зыр килеп геүләү (эш эшләгәндә). *Эш ҡыҙыу бара, ел уйнап тора;* 2) бер нәмәһе юҡ, буш, ташландыҡ хәлдә булыу. *Мейесе емерелгән, тәҙрәләре юҡ, өй эсендә ел уйнап тора.* Б. Бикбай. **Ел үтеү** (*йәки* **һуғыу**) һыуыҡ тейеү. *Эскә ел үтеү.* **Ел, ямғыр тейҙермәү** бик ныҡ һаҡлау; ҡанат аҫтына алыу. **Ҡайҙан ел ташланы?** көтмәгәндә килеп сыҡҡан кешегә әйтелә. *[Һалдат:] Ҡайҙан ел ташланы һеҙҙе! Беҙ инде мәңге килмәҫкә киткәнһегеҙҙер тип уйлағайныҡ.* Д. Юлтый.

● *Ағас башын ел бутай, әҙәм башын һүҙ бутай.* Мәҡәл. *Бер аяҡ ҡымыҙҙың ике аяҡ еле бар.* Мәҡәл. *Елдән килгән елгә оса.* Әйтем. *Ел өрмәй — ҡурай һелкенмәй.* Мәҡәл. *Йыл башында ел булһа, йыл әйләнә ел-дауыл булыр.* Әйтем. *Ярыҡ ҡайҙа — ел шунда.* Мәҡәл.

**ЕЛБЕР** *с.* **1.** Туҙғып, елберәп, елпелдәп торған. *Елбер башлы тары. Елбер сәс.* ■ *Инде хәҙер тыуыр яҙғаса ҡоштар ҡунмаҫ елбер талдарға.* Ғ. Амантай.

**2.** *күсм. шиғр.* Еңел йөрөшлө; етеҙ. *Елбер арбам, ел арбам, етер ергә ет, арбам* (Әкиәттән).

**3.** *р. мәғ.* Йылдам, тиҙ, етеҙ. *Елбер эшләү.* ■ *Ҡыҙыкайҙар .. елбер генә урындарынан торҙолар ҙа, ҡулға-ҡул тотоноп, бер һикереп ҡуйҙылар.* Ф. Рәхимғолова.

**ЕЛБЕР-ЕЛБЕР** *оҡш.* Елгә осорҙай булып елпелдәгән еңел хәрәкәтте белдергән һүҙ. *Елбер-елбер итеү.* ■ *Елбер-елбер ел иҫкәндә, тирбәлә арыштарым.* А. Игебаев. *Елбер ҙә генә елбер елгәнемдә елдәр аса минең ҡуйыным-ды* (Халыҡ йырынан).

**ЕЛБЕРЛӘК** *и.* **1.** Елгә елберләп тора торған төрлө еңел нәмә. *Гөл сәскәһе елберләгенән асыла-асыла ҙурайып, кейеҙ ҡалпаҡтай булды* (Әкиәттән).

**2.** Балыҡтың айғолаҡ аҫтындағы бәләкәй йөҙгөс ҡанаттары. *Елберләге булмаһа, балыҡ үргә йөҙә алмаҫ* (Ҡобайырҙан).

**3.** Танау тишектәренең ике яҡ ситендәге йомшаҡ өлөштәре; танау япрағы. ... *Танау елберләктәре киңәйҙе.* А. Таһиров.

**4.** Елберләп торған ваҡ итәк; ҡатмар, мәскәү.

**ЕЛБЕРЛӘТЕҮ** *к.* Елпелдәтеү, елбер-елбер иттереү. *Байраҡты елберләтеү. Йорт ҡаршыһында, йәшел япраҡтарын елгә елберләтеп, ап-аҡ зифа ҡайын үҫә.*

**ЕЛБЕРЛӘҮ** *к.* Осоноп, еңел генә ҡағылыу, елпелдәү; елбер-елбер итеү. *Елгә елберләү. Елберләгән байраҡ. Елберләп осоу.* ■ *Башындағы аҡ яулығы талғын елгә әкрен генә елберләп тора.* Ф. Рәхимғолова.

**ЕЛБЕРЛӘҮЕК** *и. ҡар.* **елберләк.**

**ЕЛБЕРЛӘШЕҮ** *к. урт. ҡар.* **елберләү.** *Байраҡтар елберләшә. Елберләшеп үҫеү.*

**ЕЛБЕРӘҮ** *к. ҡар.* **елберләү.** *Мәктәп башында байраҡ елберәй.* М. Тажи.

**ЕЛ-БУРАН** *и. йыйн.* Ел менән буран бергә. **Ел-буран уйнатыу** *шул уҡ* **ҡойон уйнатыу** (*ҡар.* **ҡойон**).

**ЕЛБӘГӘЙ**[1] *р.* Ҡаушырып элмәгән, еңелсә өҫкә һалған, быумаған көйө, ысҡындырған көйө. *Еләнде елбәгәй генә кейеү. Елбәгәй йөрөү.* ■ *Рәсимә халатын яурын башына елбәгәй һалып, тып баҫып палатаға килеп инде.* «Ағиҙел», 1969, № 7. .. *Бер ваҡыт сыҡтым урамға, өҫтә бишмәт елбәгәй.* Ш. Бабич. **Елбәгәй елән** яурынға һалып ҡына йөрөмәле еңһеҙ елән. *Ерәнсә ерән менгән, ти, елбәгәй елән кейгән, ти* (Ҡобайырҙан).

**ЕЛБӘГӘЙ**[2] *и.* Лютик һымаҡтар ғаиләһенә ҡараған иртә яҙ сыға торған һары төҫтәге ваҡ урман сәскәһе. *Эштән ҡайттыҡ яҙғы урман аша, ҡар һыуҙары ташып аҡҡанда. Елбәгәйҙәр сәскә атҡандар ҙа, тап һин булып көнгә баҡҡандар.* Р. Ниғмәтуллин.

**ЕЛБӘГӘЙ**[3] *с. ҡар.* **елбәҙәк**[1] 2.

**ЕЛБӘГӘЙЛӘНЕҮ** *к. ҡар.* **елбәҙәкләнеү**[1].

**ЕЛБӘҘӘК**[1] *с.* **1.** Елберләп осоп торған; еңел. *Елбәҙәк ҡар. Елбәҙәк япраҡ.* ■ *Шаймуратов елбәҙәк байраҡты күкрәгенә ҡыҫты, ҙур ҡулдары менән алтын суҡтарын һыйпаны.* Ә. Ихсан. *Уның [Зөлхизәнең] сәс толомдарына тағылған көмөш сулпыларының елбәҙәк суҡтарын еләҫ елдәр сыңлатып уйнай.* З. Биишева. / Еңел генә иҫкән, йомшаҡ (елгә ҡарата). *Елбәҙәк ел сәскәләрҙе һөйә-үбә, иркәләй-тирбәтә уятып, тыуасаҡ таң йөҙөнә хушбый бөркөп сыға.* З. Биишева.

**2.** *күсм.* Еңел, осоп-төшөп торған, осҡалаҡ ҡылыҡлы. *Елбәҙәк күңел. Елбәҙәк ҡыҙ.* ■ *Үн ете йәшлек баланың күңеле, күбәләк кеүек, елбәҙәк була шул.* Х. Ғиләжев.

**ЕЛБӘҘӘК**[2] *и.* Балыҡ тәңкәһе кеүек кеңә, йоҡа, ялтырауыҡ, йылтыр биҙәүес. *Елбәҙәк баҫыу. Елбәҙәк тағыу. .. Аҡ ҡайындар .. ялбыр ботаҡтарын, яһалма суктар һымаҡ йылғаның өҫтөнә һалындырғандар. .. Улар бер ҡарағанда, биҙәкле суктар кеүек, ә бер ҡарағанда ҙур елбәҙәк кеүек күренәләр.* И. Насыри.

**ЕЛБӘҘӘКЛЕ** *с.* Елбәҙәк[2] баҫылған, елбәҙәк тағылған. *Елбәҙәкле камзул. Елбәҙәкле яулыҡ.* ■ *Аллы-гөллө ебәк, кешәмер шәлдәр, аҡ, зәңгәр, йәшел ҡулдәктәр, елбәҙәкле бәрхәт камзулдар күҙҙең яуын алып тора.* Ф. Рәхимғолова.

**ЕЛБӘҘӘКЛӘНЕҮ**[1] *к.* Еңел ҡылыҡлы булып ҡыланыу, остоҡайланыу. *[Йомай — ҡыҙына:] Был тиклем остоҡай булырһың икән! Кендек инәйеңә оҡшап, гел елбәҙәкләнеп тороу буламы!* Һ. Дәүләтшина.

**ЕЛБӘҘӘКЛӘНЕҮ**[2] *к.* **1.** *төш. ҡар.* **елбәҙәкләү**[2]. *Елбәҙәкләнгән елән.*

**2.** Елбәҙәк булыу, еңел булыу. *Елбәҙәкләнеп күренгән ҡар. Елбәҙәкләнеп осоу.*

**ЕЛБӘҘӘКЛӘҮ** [1] *ҡ.* Еңел генә елберләп осоу. *Һалмаҡ ҡына елбәҙәкләп, мамыҡ ҡар яуҙы ергә.* С. Муллабаев.

**ЕЛБӘҘӘКЛӘҮ** [2] *ҡ.* Елбәҙәк тағыу, елбәҙәк баҫыу. *Елбәҙәкләп теккән зәңгәр бәрхәт зифа буйға бигерәк килешкән.* Ш. Бабич.

**ЕЛҒЕР** *с.* Шәп елеүсән; етеҙ. *Елгер ат.* ■ *Ҡарабай айбар ир булған, аттары елгер булған, мал-тыуары күр булған.* «Ҡуҙыйкүрпәс менән Маянһылыу».

**ЕЛГЕРЛӘК** *и. диал. ҡар.* **елберләк** 2. *Дарьяларҙа балыҡ йөҙә алмай, елгерләкәйҙәре булмағас* (Халыҡ йырынан).

**ЕЛГӘРГЕС** *и.* Ашлыҡ елгәрә торған машина. *Ҡул елгәргесе. Моторлы елгәргес.* ■ *Көндөҙ һуғылған иген ваҡытында елгәреп бөтөлмәй ҡала. Кисен уны елгәргескә һалаһың.* И. Насыри.

**ЕЛГӘРЕЛЕҮ** *ҡ. төш. ҡар.* **елгәреү** 1. *Елгәрелгән ашлыҡ.*

**ЕЛГӘРЕҮ** *ҡ.* **1.** Ашлыҡты ел йәки машина менән өрҙөрөп сүптән таҙартыу. *Орлоҡ елгәреү.* ■ *Игенде ат менән баҫтырып, көрәк менән елгәрә инек.* М. Тажи.

**2.** *күсм.* Ташлап ебәреү, бырғау. *Һиҙгер балыҡсы йәнә эшен көйләп ебәрә, дәү генә бер оптоно яр ситенә елгәрә.* А. Игебаев.

**3.** *күсм.* Ҡолас ташлап һуғыу. *Былар хәҙер һуғыша инде, мин әйтәм .. Саматҡа Хәйри берҙе елгәреп алһа, зыян итмәҫ ине, тип уйлайым.* Н. Мусин.

**4.** *күсм. һөйл.* Бушҡа туҙҙырыу (аҡсаға, мөлкәткә ҡарата). *Айлыҡ эш хаҡын бер аҙнала елгәреп бөткән. Өй эсендә йыһаз бөттө. Ҡайһыларын кәйеф-сафа ҡылыуға килгеләп йөрөгән Ислам ҡырҙы, бәгзеләрен осһоҙ хаҡҡа үҙе елгәрҙе.* «Ағиҙел», 1985, № 6. **Елгә елгәреү** бушҡа туҙҙырыу. *Аҡсаны елгә елгәреү.*

**ЕЛГӘРЕҮСЕ** *и.* Ашлыҡ елгәреү эшендә эшләгән кеше.

**ЕЛГӘРЕШЕҮ** *ҡ. урт. ярҙамл. ҡар.* **елгәреү** 1. *Ашлыҡ елгәрешеү.*

**ЕЛГӘРТЕҮ** *ҡ. йөкм. ҡар.* **елгәреү** 1. *Ашлыҡ елгәртеү.*

**ЕЛҒЫУАР** *с.* Эш һөймәҫ, эсе буш, еңел холоҡло. *Елғыуар кеше. Елғыуар әҙәм.* ■ *Мин елғыуар түгел. Балаларым тел тейҙермәй минең эшемә.* М. Кәрим. *Бер елғыуар, ҡыуыҡ баштың да бит ваҡыты менән сәсе ағара.* С. Әлибаев. // *Ана бүрәнә баштарында [ултырған] ауылдың эшһеҙ ҡарт елғыуарҙары алағайымға Ҡыҙрасты һүгәләр.* Т. Йәнәбн.

**ЕЛҒЫУАРЛАНЫУ** *ҡ.* Елғыуар булыу. *Елғыуарланып йөрөү.*

**ЕЛ-ДАУЫЛ** *и. йыйн.* **1.** Бик көслө ел. *Ел-дауыл ҡубыу. Ел-дауыл сығыу.* ■ *Төн урталары еткәс, ҡапыл ел-дауыл ҡутарелеп, ағас баштары шаулай башлаған, ҡая таштары гөрһөлдәп ауған, күк йөҙөн ҡап-ҡара болот ҡаплаған, ти* (Әкиәттән).

**2.** *күсм.* Оло талаш, ғауға. *Ел-дауыл ҡуптарыу.* ■ *Өйҙә уларҙы [кешеләрҙе] ел-дауыл, күҙ йәштәре көтә ине.* Х. Ғиләжев.

**ЕЛДЕРЕҮ** *ҡ.* Бик ҙур тиҙлек менән хәрәкәт итеү; елеү. *Елдереп барып етеү. Елдереп ҡайтып китеү. Ауылға елдереү. Машина елдерә.* ■ *Күҙ асып йомғансы булмай, пар туры аттар еңел сананы елдереп алып китте.* Һ. Дәүләтшина. *Айғырымды мендем эйәрләп, елдерҙем мин һуғыш еренә.* Салауат Юлаев.

**ЕЛДЕРТЕҮ** *ҡ. ҡар.* **елдереү.** *Елдертеп алып ҡайтыу. Елдертеп барып етеү.* ■ .. *Капитан Хөсәйен Ибраһимов килеп сыҡты.— Әй, дуҫ кеше — тине ул Сабитовка,— Әйҙә елдерт! Бөркөт туҡталыуҙы белмәй ул.* Ә. Ихсан.

**ЕЛДӘК** *и.* Бер башҡорт ырыуының исеме. *Ҡыр елдәк. Бүре елдәк.*

**ЕЛДӘҮЕК** *и.* Ағастағы һепертке һымаҡ ҡуйы булып сыҡҡан зәғиф ботаҡтар. *Елдәүек алыҫтан ҡап-ҡара булып күренеп тора.*

**ЕЛЕ** *и.* **1.** Өс-дүрт метр араlыҡтағы суҡмар башлы тәпәшәк ҡаҙыҡтарға тартылған бау (ҡолондарҙы теҙеп бәйләү өсөн). *Ҡыларҡан еле. Еле һуҙыу.* ■ *Байҙар йылҡыларын яландан ҡайтарып, елегә ҡолондарын бәйләп, бейә һауырға тотондолар.* Д. Юлтый. *Көн буйына елегә бәйләнгән, тамағы ҡатып сарсаған ҡолондар ҙа ағытыла. Улар ситлектән ҡотолған ҡош кеүек үрле-ҡырлы һикерә.* Т. Хәйбуллин. *Әй йәмле лә Урал буйҙары, еле һуҙып ҡолон бәйләүе* (Халыҡ йырынан).

**2.** Епкә күп итеп теҙгән эре ҡармаҡ. *Эрерәк балыҡ ҡарпытырға [малайҙар] еле һалдылар йылғаға.* Ғ. Хөсәйенов.

**3.** Ҡайһы бер үҫемлектәрҙең ергә һырығып үҫкән оҙон һабағы. *Ҡабаҡ елеһе. Ҡауын елеһе. Еле ебәреү. Ҡыяр еле һуҙа башлаған.*

**ЕЛЕГЕҮ** (елек*2*) *ҡ.* **1.** Еҫкәнеп, темеҫкенеп аҙыҡ эҙләп төрлө яҡҡа йүгергеләү; еләү. *Бүре елегеп йөрөй.*

**2.** Электән өйрәнгән ғәҙәтен, ҡылығын ташлау. *Елегеп китеү. Елегеп йөрөү.* ■ *Ерән атым елекмәһә, килер инем таң менән* (Халыҡ йырынан).

**ЕЛЕЙ** *и. диал.* Юртаҡ.

**ЕЛЕК** *и.* Һөйәк эсендәге ҡыуышлыҡтағы майлы матдә. *Елек кимереү. Елек һурыу. Елек майы.* ■ *Бураһында бөткән бар игендәр, ҡалған кәбәк-һәбәк ваҡ-төйәк. Бура тороп ҡалған бер нәмәһеҙ, тап елеген алған ҡыу һөйәк.* М. Ғафури.

◆ **Елеккә май тиртеү** көс йыйылыу.— *Ай, тыуған ил, тыуған ил, .. елеккә май тирткән ер, ирҙәрҙе ир иткән ер.* Р. Ниғмәти. **Елеккә төшөү** (*йәки* **үтеү**) тәнде, йәнде ныҡ әрнетеү; үҙәккә үтеү. *[Зөлхәбирә:] Ғазаптарым сигенә етте, әрнеүҙәрем елегемә төштө.* М. Кәрим. *Аһ, быйыл ҡыш! Төкөрөк ергә төшмәй, електәргә үтә һыуығы.* Б. Бикбай. **Елеккә һеңеү** бөтә тәнгә йоғоу. *Башҡорттоң ҡурҙағын, ҡулламаһын ашаһаң, .. эскә түгел, елеккә һеңә.* Ш. Шәһәр. **Елек майы һыҙылыу** ныҡ әрнеү. *Ирек өсөн әҙме уҙамандың елек майҡайҙары һыҙылған!* Х. Назаров. **Електе киптереү** ныҡ интектереү, тәҡәтһеҙ итеү. *[Яппар:] А-ай, ошо бисәне! Ғүмер буйы көнләшеп, елегемде киптерҙе бит!* Б. Бикбай. **Електе** (*йәки* **елек майын**) **һурыу** бөтә көс-көүәтте бөтөртөп, ныҡ эшләтеү. *Мәскәй әбей*

*булып, килененең елек майын һурған кәйнәләр ҙә була ти ул.* З. Биишева. **Елек һөйәге** аяҡ-ҡулдың эсе ҡыуыш оҙон һөйәге. *Елек һөйәге сатнау.* ■ *Оҙон юлдар уның быуындарын, елек һөйәктәрен талдырған.* Б. Вәлит. **Ҡом елек** көсһөҙ, кәрһеҙ. *Улмы ни урман ҡырҡыр кеше, ҡом елек.* **Төпөш елек** *диал.* бот һөйәге. **Һары елек** ныҡлы, көслө (кешегә ҡарата). *Нисә әйтһәң дә, ит ашап, мул торған кеше һары елек инде.* Т. Хәйбуллин.

● *Ылаҡ елекһеҙ, улан белекһеҙ* (кәзә бәрәсенең елеге, баланың белеме булмай тигән әйтем).

**ЕЛЕЛЕ** *с. этн.* Ҡолоно булған (елегә бәйләрлек). *Турахан ҡыҙын оҙатҡан сакта ун ике елеле бейә бирә. Ул ун икенең араһында бер бейә була.* «Бабсаҡ менән Күсәк».

**ЕЛЕЛЕК** *и.* Ҡолондарҙы бәйләү, бейә һауыу өсөн еле яһалған махсус урын. *Елелектә бәйле торған ҡолондар. Бейәләрҙе елелеккә килтереү.* ■ *[Зөлхизә Ярматка:] Төнлөк ябылып, уттар һүндерелгәс, елелеккә елеп килерһең.* Н. Иҙелбай.

**ЕЛЕЛЕКЛӘҮ** *ҡ.* Еле яһап, ҡолон бәйләү. *Беҙҙең генә йәйләү бигерәк йәмле елелекләп ҡолон бәйләргә* (Халыҡ йырынан).

**ЕЛЕМ** *и.* Нәмәлер йәбештерә торған ҡуйы шыйыҡса. *Агас елеме. Резина елеме. Ҡагыҙ елеме. Елем менән йәбештереү.* ■ *Егеттең [угының] сыбыгы ҡомда үҫкән ҡоба талдан юнып яһалган, осондагы башагына ете төрлө балыҡ өҫтөнән алынган елем менән ныгытылган* (Әкиәттән).

♦ **Елем үләне** *ҡар.* **үлән. Ҡорт елеме** бал йыйыусы ҡорттар эшләп сығарған, умарта эсендәге ектәрҙе һәм бал менән тулған күҙәнәктәрҙе һылап ҡуя торған ыҫмала һымаҡ йәбешкәк матдә; прополис. *Хәҙерге медицина бал ҡортоноң күп продукттарын ҡуллана башланы. Һуңгы йылдарҙа ҡорт елеме (прополис) тураһында күп һөйләйҙәр.* «Совет Башҡортостаны», 1986, 10 июнь.

**ЕЛЕМКӘС** *и. этн.* Ҡауырһындың йөнөн һыҙырып алып уҡтың киҙеһенең юғары яғына елем менән йәбештерелеп эшләнгән уҡ; ҡауырһын йөнө ҡуйылған уҡ; йөнлө уҡ.

**ЕЛЕМЛӘНЕҮ** *ҡ. төш. ҡар.* **елемләү.** *Елемләнгән ҡагыҙ.*

**ЕЛЕМЛӘТЕҮ** *ҡ. йөкм. ҡар.* **елемләү.**

**ЕЛЕМЛӘҮ** *ҡ.* Елем һөртөү. *Елемләп йәбештереү.*

**ЕЛЕМЛӘШЕҮ** *ҡ. урт. ярҙамл. ҡар.* **елемләү.**

**ЕЛЕМСӘ** *и.* Ашлыҡ бөртөгөндәге аҡһым матдәһе.

**ЕЛЕН** *и.* Һөтимәр инә хайуандарҙың һөт биҙҙәренән торған һөт биреү ағзаһы. *Бейә елене. Һыйыр елене. Елене ҙур. Елен шешеү.* ■ *Ашап, туйып, еленен һөт менән тултырып .. кәзә ҡайтып килгән* (Әкиәттән). **Елен еткереү** (*йәки* **төшөрөү, тултырыу, тирттереү**) мал быҙауларға, ҡолонларға, бәрәсләргә етешеү. *Бөгөн-иртән бәрәсләргә тора ике һарыҡ елен тирттереп.* М. Тажи. *Һыйырҙарҙың бер-бер артлы быҙаулаган сагы. [Һауынсылар] елен тултырган һыйырҙарҙы һаҡлар өсөн, алмашлап дежур итә.* Ә. Гәрәев. **Елен төбө** елендең иң төпкө өлөшө һәм шул өлөштәге һөт. *Елен төбөндә һөттөң ҡуйыһы ҡала.* ■ *Елен төбөн генә тамыҙып, тирләп-бешеп сәй эс[ә].* Р. Низамов. **Ит елен** һөтө әҙ була торған ҙур елен.

● *Һыйырҙың һөтө еленендә, елендән алда телендә.* Әйтем.

**ЕЛЕНЕК** *с. һөйл.* Ҙур еленле, һөтлө (һыйырға ҡарата).

**ЕЛЕНЛЕ** *с.* Елене бар, елене булған. *Бәләкәй еленле. Ҙур еленле һыйыр.* ■ *[Һыйырҙары] бура кеүек эре, үҙҙәре яҡшы еленлеләр. ..Йылҡылдап торган бестужевка токомо.* «Ағиҙел», 1982, № 9.

**ЕЛЕНЛӘҮ** *ҡ.* Быуаҙ малдың (быҙаулау, ҡолонлау, бәрәсләү һ. б. алдынан) һөт биҙҙәре эшләй башлау, елене тулышыу. *Тана еленләп йөрөй. Бейә еленләгән.* ■ *[Ғәйниямал Ҡаракөләмбәткә:] Анау торган ҡара танаң еленләгән, эсендә быҙауы булһа, мин дә ауырлы булырмын.* «Бабсаҡ менән Күсәк».

♦ **Елгә еленләп, боҙға быҙаулау** *ҡар.* **ел.**

**ЕЛЕҮ** *ҡ.* Бик ҙур тиҙлек менән хәрәкәт итеү. *Ат менән елеү. Елеп килеү. Машина елә.* ■ *Күк айгыр.. һырт түбәненә ҡарай елеп китте.* З. Биишева. *Мин уҡырга китеү шатлыгынан аягым ергә теймәй Ҡарагай ауылына елдем.* Ә. Вахитов. *Еткән егеткә ни кәрәк? Менеп елер өсөн ат кәрәк* (Ҡобайырҙан).

**ЕЛЕШЕҮ** *ҡ. урт. ҡар.* **елеү.**

● *Алтмыштагы Алпамыша менән алышыр, етмештәге йылҡы менән елешер.* Мәҡәл.

**ЁЛКА** [*рус.*] *и.* Яңы йыл байрамында биҙәп ултыртылған шыршы. *Яңы йыл ёлкаһы. Ёлка биҙәү.* ■ *Күҙҙе ҡамаштырып нур сәселде ёлкалагы бик күп тәтәйҙән.* А. Игебаев. / Шул шыршы эргәһендәге уйын. *Ёлкала булыу. Ёлкала бейеү. Ёлкала йырлау.*

**ЕЛКЕНДЕРЕҮ** *ҡ.* Дәрт биреп, ашҡындырыу. *Күңелде елкендереү.* ■ *Эшселәрҙең күкрәгенән сыҡҡан революцион йыр Заһиттың йөрәген елкендерҙе.* Я. Хамматов. *Баныу .. еңел, шыма һәм күңелде елкендерә торган, уның үҙенә генә хас булган йөрөшө менән шаршау ягына сыгып китте.* Ә. Вәли.

**ЕЛКЕНЕҮ** *ҡ.* **1.** Ҡанат ҡағып үргә ынтылыу; елпенеү, талпыныу. *Һайыҫҡан ҡурҡышынан ҡапыл елкенеп.. ситкә осто.* Я. Хамматов. / Ел ыңғайына тирбәлеү; елберләү. *[Бригадир] йомшаҡ ҡына иҫкән елгә елкенеп ултырган башаҡтарга ҡарай.* И. Ниғмәтуллин.

**2.** *күсм.* Нимәлер эшләргә дәртләнеп, ашҡынып китеү, ынтылыу. *Елкенеп эшләү. Елкенеп ҡайтыу.* ■ *Ҡолйерән [ат] яулыҡ еҫенән эйәһенең иҫәнлеген һиҙеп, елкенеп китә* (Әкиәттән). *Алтынбайҙың алты улы атылып килә башланы, ти, Етембайҙың ете улы елкенеп килә башланы, ти* (Ҡобайырҙан).

**3.** *күсм.* Хискә, дәрткә тулышып ярһыу; ашҡыныу. *Йөрәк елкенә. Күңел елкенә. Елкенеп тороу. Елкенеп эшләү.* ■ *Бөгөнгө һымаҡ уның [Мәрйәмдең] киноға тулҡынланып, елкенеп барганы юҡ ине. Йөрәге сыгамы ни?* Р. Низамов. *Йәйге таңдар атҡан сакта елкенәләр йәш йөрәгем.* Д. Юлтый.

● *Ашағанда колағың һелкенһен, эшләгәндә йөрәгең елкенһен.* Мәкәл. *Елһез тирәк һелкенмәҫ, йүнһез йөрәк елкенмәҫ.* Әйтем.

**ЕЛКЕНЕШЕҮ** *к. урт. кар.* **елкенеү** 2. *Егеттәр елкенешеп бесән сабырға киттеләр.* М. Тажи.

**ЕЛКЕНСӘК** *с.* Елкенеп, ашҡынып торған; дәртле. *Елкенсәк кеше.* ■ *Елкенсәкәй йөрәк елкендеңме, кайнап торған дәртең бар сакта?* Т. Йәнәби. / *Иртуған елкенсәк, кыйыу, шаян, күп һөйләргә ярата.* К. Мәргән.

**ЕЛКЕТЕҮ** *к.* Хис, дәрткә тултырып ярһытыу; ашҡындырыу, елкендереү. *Күңелде елкетеү.* ■ *Йәш йөрәгемде елкетә һинең татлы һуҙҙарең* (Халыҡ йырынан).

**ЕЛКӘ** *и.* **1.** Муйындың артҡы яғы. *Елкә сокоро. Елкә тамыры.* ■ *Новиков елкәһенә аҫа торған сумкаһын кулына тотоп, минең арттан сыкты.* Д. Юлтый.

**2.** Өҫ кейеменең шул урынға тура килгән өлөшө. *Кулдәктең елкәһе. Кейемдең елкәһе туҙыу.*

♦ **Елкә бөгөлөү** ныҡ бирешеү. *Ул [Үмәр] ошо бер-ике сәғәт эсендә әллә нисә йыллыҡ картайҙы. Елкәһе бөгөлдө.* Һ. Дәүләтшина. **Елкәгә менеү** (*йәки* **ултырыу**) еңеп алыу, буйһондороу. *[Әптрәхим — Нәғимгә:] Шулайтып һин собрание һайын ихтыярҙарына куйһаң, улар бик тиҙ елкәңә менерҙәр.* Һ. Дәүләтшина. **Елкәгә тейеү** 1) ашаған ашамлыҡ ныҡ майлы булыу сәбәпле ауыр ҡабул ителеү, ауыр булып тороу; күңелгә тейеү. *Һарык ите бик һимеҙ ине, елкәгә тейҙе;* 2) эштең ауырлығы, бер төрлөлөгө һ. б. оҡшамау, ныҡ йонсотоу; күңелгә ятмау, ялкытыу. *Елкәгә тейеп йөҙәтеү.* ■ *Ҡаты эш Шәкирәнең елкәһенә тиҙ барып тейҙе .. Ул .. «Ундай ауыр эштә башка эшләй алмайым»,— тип әйтеп ебәргән.* М. Кәрим. **Елкәгә төшөү** берәй эш, яуаплылыҡ, бурыс кемдеңдер булһа яуаплылығына, ҡарамағына ҡалыу. *Барлыҡ булған ижади эҙләнеүҙәрҙең иң ҙур ауырлығы йәш инженер Риза Исхаков елкәһенә төштө.* М. Хәйҙәров. *[Тимер:] Таяктың ауыр башы минең елкәгә төшә. .. Нәмә эшләйһең, йәшлек, хаталанғанмын..* Б. Бикбай. **Елкәне кнмереү** (*йәки* **ашау**) үҙең эшләмәй, кемдеңдер иҫәбендә йәшәү. *[Ямал:] һин бит алағанат, летун, бисәңдең елкәһен ашап ятаһың.* М. Тажи. **Елкәне тырнау** нимәнелер хәл итә алмай аптыраныу.— *Әллә инде ..— Тимер елкәһен тырнап, уйланып алды.— Ҡайһылай булыр икән һуң, башта сакырғас ук бармағас? Уңайһыҙ бит әле..* Б. Бикбай. *Күсәр хан, был хәбәргә ни тип әйтергә белмәй елкәһен тырнап ултыра ине* (Әкиәттән). **Елкәнән төшөү** ниндәйҙер бер ауыр хәл, бурыс, яуаплылыҡтан ҡотолоу. *Колхозда ауыр эш беҙҙең елкәнән төштө, хәҙер техника эшләй.* **Елкә сейләнеү** ауыр эш менән ныҡ йонсоу, ыҙалау. *Елкәһе сейләнгән халыҡ белмәй кыскырмай ул.* Б. Хәсән. **Елкә тартышыу** берәй эш, йомош һ. б. ҡушҡанда ризаһыҙлыҡ белдереү, нисек тә эшләмәҫкә тырышыу. *Ул малай ялкау, эш кушһаң, елкәһе тартыша башлай.* **Елкәһе йоҡа** ауыр эшкә яраҡһыҙ булған, эш яратмаған кешегә әйтелә. *Фермаға килһәләр, эш табып бирер инек беҙ уларға.., килмәҫтәр шул, елкәләре йоҡа.* «Совет Башҡортостаны», 1975, 6 февраль. **Елкәһе ҡалын** *йәки* **ҡалын елкә** мал-мөлкәтле; бай. **Елкәһендә йәшәү** (*йәки* **ултырыу**) үҙең эшләмәй кемдеңдер, нимәнеңдер иҫәбенә йәшәү. *Хөкүмәт елкәһендә йәшәү.* ■ *[Оркоя:] Ә иремде .. урләткәс, эшемде ташларға тура килде .. [Рәхимйән:] .. Әһә, тимәк, хәҙер ир елкәһендә йәшәйһегеҙ..* Н. Иҙелбай. **Елкәһендә татыу** ниндәйҙер ауыр хәлде үҙең кисереп белеү; башыңдан үткәреү. *Баланы дөрөҫ юлға төшөрөү, уға дөрөҫ йүнәлеш биреү — әнә менән койо ҡаҙыу ул. Беҙ, оло укытыусылар, быны үҙ елкәбеҙҙә татып беләбеҙ.* М. Тажи. **Елкәһе соҡор** *йәки* **соҡор елкә** ялҡау. *[Батырйән — Килдебайға:] Эш һөймәйһең, елкәң сокор, ә нәфсе тигәнең убыр өңөләй.* Ә. Мирзаһитов. *Эх, һин, Хәбрәй, соҡор елкә! Эш юк эрҙә, ҡустым, аш та юк.* Ш. Биҡкол. **Елкәһенә һалыныу** кемдеңдер, нимәнеңдер иҫәбенә йәшәү, барлыҡ ауырлыҡ, яуаплылыҡты уға һалыу. *Кеше елкәһенә һалыныу. Хөкүмәт елкәһенә һалыныу.*

● *Елкә сокороңдо күрмәйһең, күрмәһәң дә үлмәйһең.* Әйтем. *Еңгән — еңелгәндең елкәһенә менгән.* Әйтем. *Уракsыының елкәһенә ҡарама, көлтәһенә ҡара.* Әйтем.

**ЕЛКӘЛЕ** *с. һөйл.* Хеҙмәт һөйөүсән; тырыш.

**ЕЛКӘЛЕК** [1] *и.* **1.** Ҡамыт ағастарын тотороп тороу өсөн юғары осонан ҡушып бәйләнгән бау.

**2.** Ҡамыттың елкәһендәге ышлыя бәйләй торған ҡайыш (ышлыяны тотоп тороу һәм кәрәгенсә ҙурайтыу, кесерәйтеү өсөн хеҙмәт итә).

**3.** Кейем елкәһенә тағылған элгес; элмә. *Тундың елкәлеге өҙөлгән.*

**ЕЛКӘЛЕК** [2] *и. этн.* Елкәгә сәс толомо өҫтөнән таға торған тәңкә, мәрйен баҫып һәм тәңкә, мәрйен менән суҡлап яһалған ҡатын-ҡыҙ биҙәүесе. *Елкәлек тағыу.* ■ *[Ҡатын-ҡыҙҙың] түшендә муйынса әмәйлек. Артында — аркалыҡ, кайһы берҙәрендә — елкәлек. Беләгендә — беләҙек, кулында — кашлы йөҙөк.* К. Мәргән.

**ЕЛКӘЛӘҮ** *к.* **1.** Елкәгә һалыу; күтәреү. *Елкәләп ташыу.* ■ *Хәким ағай икенсе токто елкәләп алды. Әсеүәт апай ҙа иңбашына бер тоҡ күтәрҙе.* Й. Солтанов. / *күсм.* Үҙ яуаплылығыңа, үҙ өҫтөңә алыу. *[Гөлйөҙөм:] Ауыр эште үҙе елкәләһә, мин эшләрмен башкаһын.* С. Ҡудаш.

**2.** *күсм. һөйл.* Елкәгә тондороу, һуғыу, туҡмау. *[Зәйнулла:] Мөхәббәттең төп хужаһы ҡайтты. Ә ул уҫал, кылығы кыркыу уның. Елкәләп тә сығарыуы мөмкин..* М. Кәрим. *[Искәндәр:] Мине шуныһы ғәжәпләндерә: Ни өсөн һеҙҙе елкәләп, типкеләп кыуып ебәрмәйҙәр?* Ш. Насыров.

**ЕЛКӘМЕС** *и. диал. кар.* **Елкәлек** [2].

**ЕЛКӘН** *и.* Карапты, кәмәне ел менән йөрөтөү өсөн махсус кирелгән туҡыма. *Елкән ҡороу. Елкән яһау.* ■ *Ағиҙелкәйемдән йөҙөп китһәм, елкәнемде кереп гиҙеп йөрөһәм, биш диңгеҙгә барып етә алам.* М. Марат. *Сәйҙел көлә: — һеҙҙең кулдә һис бер елкәнһеҙ ике тапкыр йөҙөп сығам, Зәйнәп. Ҡара бына нисек ишкәнде.* Ғ. Сәләм.

● *Ялан ерҙән ел иҫер, елкән төбөн ком киҫер.* Мәҡәл.

**ЕЛКӘНЛЕ** *с.* Елкән ҡуйылған, елкән менән йөрөй торған. *Елкәнле кәмә.* ■ *Шәп егет ине бит ул, Юламан. Уның аҡҡош муйынлы, елкәнле, йылғыр кәмәһе ауыуҙы ла, батыуҙы ла белмәне.* З. Биишева.

**ЕЛКӘСУҠ** *и. этн.* Ҡатын-ҡыҙ еләненең елкәһенә ҡуйылған уҡа суҡ.

**ЕЛКӘТ** *с. диал.* Екәт.

**ЕЛКӘҺЕҘ** *с. һөйл.* Эш яратмаған; ялҡау.

**ЕЛЛЕ**[1] *с.* Еле көслө булған, ел иҫеп торған. *Елле көн.* ■ *Ялан яҡтарында ғына була торған ҡырҡыу елле, епшек март бурандары башланып китте..* Б. Бикбай. *Таштуғайҡай елле туғай икән, сәскәләре ҡойола ел менән* (Халыҡ йырынан). / Ел менән бер үк ваҡытта булған. *Елле ямғыр.*

**ЕЛЛЕ**[2] *с.* **1.** Ҙур, көслө, шәп, ныҡлы. *Елле ат. Елле егет. Елле кеше.* ■ *Һыуҙа ятҡан бәрҙене мин дә күрҙем, елле генә ине.* Н. Мусин. *[Асылбаев:] Минең эскадрон командиры булған ваҡыт. Елле мәл.* Ә. Ихсан.

**2.** Яҡшы, һәйбәт, шәп. *Елле өй. Елле китап.* ■ *[Хисаметдин:] Анауында бик елле шишмә бар.* Р. Солтангәрәев. *Әбүзәр бейек ҡарағайҙарҙы һәм ҡарағастарҙы күргән һайын аптырап: — Вәт елле ағас! Йығып ярғылаһаң, күпме тыранса сығыр ине,— ти.* Я. Хамматов. *Ҡәуи мәғзум .. бер талай һүҙ бутап, үҙенең телмәре елле сыҡһын тип, ҡулдарын алға һуҙып .. лозунг менән һүҙен бөтөр[ҙө].* Һ. Дәүләтшина.

**ЕЛЛЕК** *и.* **1.** Нимәнелер елдәи ышыҡлау өсөн ҡуйыла торған кәртә (ел һуғып төтөндө кире индермәһен өсөн мөрйәгә, юл һ. б. ҡар баҫмаһын өсөн юл буйына ҡуйыла). *Мөрйә еллеге. Еллек тотоу. Еллек ҡуйыу.* ■ *Тотҡандар ҙа улар [күршеләр] дыуамалға еллек ултыртҡандар буранға.* С. Ҡудаш.

**2.** Ян-яғы асыҡ, башы ябыҡ мал кәртәһе; лапаҫ. *Малды еллеккә ябыу.* ■ *Йәйлектә еллек урынына ғына файҙаланылған иҫке ҡура [емерелергә] тора.* Я. Бәлиев.

**3.** Мейестең тын өрөлә торған аҫҡы тишеге. *Еллекте асыу. Еллекте ябыу.*

**4.** *диал.* Төнлөк. *Мунса еллеге.*

**5.** *диал.* Кәбән тағаны.

**ЕЛЛӘНЕҮ**[1] *ҡ.* **1.** Елдәи еләҫ алыу, елгә һыуыныу. *Һауаға сығып елләнеү.* ■ *Януҙаҡ карт камзул төймәләрен ысҡындырып елләнеп алды.* М. Тажи.

**2.** Оҙаҡ елдә булыу, сәбәпле туҙыу, уңыу. *[Һалдаттарҙың] өҫтөндә елгә елләнеп, туҙып бөткән һоро шинелдәр.* З. Рафиҡов.

**ЕЛЛӘНЕҮ**[2] *ҡ.* **1.** Эш-хәрәкәткә ҡыҙыулыҡ, көс алыу. *[Торналар] муйындарын һуҙып йүгереп .. баралар ҙа, елләнгәс кенә ҡанаттарын йәйеп осоп китәләр.* Ә. Бикчәнтәев.

**2.** *кусм.* Дәрткә, хискә тулышыу; елкенеү. *Ул [Айбулат] батша төшкән хөрриәт менән елләнеп, учредительный собраниеларға барып йөрөнө.* Һ. Дәүләтшина.

**3.** *кусм.* Асыу менән ярһыу; енләнеү. *Өмөтбикә елләнеп тағы ла ире эргәһенә килеп етте: — Баш тигән нәмәң бармы, юҡмы һинең аҙырак?* Р. Ғабдрахманов. *Шул арала елләнеп, .. быймаһының карын да каҡмай Шәмсетдин килеп инде.* Р. Низамов.

**ЕЛЛӘНЕҮ**[3] *ҡ.* Еллегә, яҡшыға, һәйбәткә әйләнеү; яҡшырыу, шәбәйеү. *Хәҙер колхоз елләнде. Баҫыуҙағы бөтә эш машина менән генә бара бит.* «Совет Башҡортостаны», 1965, 11 июнь.

**ЕЛЛӘТЕЛЕҮ** *ҡ. төш. ҡар.* **еллэтеү** 1, 2.

**ЕЛЛӘТЕҮ** *ҡ.* **1.** Ел өрҙөрөп, һауаны яңыртыу. *Бүлмәне елләтеү.* ■ *Баш осонда өҙлөкһөҙ әйләнеп торған вентиляторҙар ғына бүлмәне бер аҙ елләтә.* З. Хисмәтуллин. / Елпетеп еләҫләү. *[Сестра] салфетка менән битемде елләтә.* С. Кулибай.

**2.** Елдә киптереү. *Кейемде елләтеү. Елләтергә элеү.*

**3.** *эйһ. ф. ҡар.* **елләү** 1. *Яҙғы ҡояш һирәк күренә. Ҡар яуа. Елләтә. Иртәле-кисле һыуыта.* Я. Хамматов.

**ЕЛЛӘТКЕС** *и. һөйл.* Ел өрҙөрөп, һауаны елләтә торған ҡорамал; вентилятор.

**ЕЛЛӘТТЕРЕҮ** *ҡ. йөкм. ҡар.* **елләтеү** 1, 2.

**ЕЛЛӘҮ** *ҡ.* **1.** Елле булыу, ел сығыу, ел өрөү. *Көн елләһә, уны йә аяҙға, йә ямғырға, тиҙәр кешеләр.* Н. Нәжми. *Көнө буран, елләп тора, өҫкә ҡарҙар һылаша* (Бәйеттән). *Ел елләмәй томан асылмай, йыр йырламай йөрәк баҫылмай* (Халыҡ йырынан).

**2.** Саф һауала булыу, елдең тәьҫирен кисереү. *Елдә елләү.* ■ *Иртә яҙҙан тау битләүе асыла .. Беҙҙең һыйырҙар шунда .. елләп, ҡаулан ашап ҡайталар.* И. Ғиззәтуллин.

**3.** Ел үткәреп, һауа яңыртыу. *Бүлмә елләгән, тын алыуға иркен булып ҡалған.* / Елдә ҡағылып, сафланыу. *Кейем елләп, күк еҫе бөтөп ҡалған.*

**4.** Дымы бөтөү, кибеү. *Елгә елләү.* ■ *[Бригадир:] Ҡара уны, ашлыҡ елләп етмәгән, күтәремдәрҙе вағырак итеп ташла.* Б. Бикбай. / Ел тәьҫире арҡаһында ҡарайыу. *Елдә елләп, ҡояшта ҡаҡланып бөткән Фазыл дуҫ мине баштан-аяҡ күҙҙән үткәрҙе.* А. Ғирфанов.

**5.** Елгә елберләү. *Елләй-елләй япраҡ ҡояһығыҙ, алыҫ сәфәр киткән ҡоштарға. Ағастарым, һеҙҙең менән бергә тағы бер ҡыш бергә ҡышларға.* Н. Нәжми.

**6.** *кусм.* Көс менән ырғытыу; бәреү. *Елләп ебәреү.* ■ *Бикйән [егетте] күтәреп алып зыр әйләндерҙе лә .. ситкә елләне, егет биш-алтыға тәгәрләп барып аяҡҡа баҫты.* «Бикйән Мәргән». / Көс менән һуғыу. *Яңаҡҡа елләп ебәреү.*

**ЕЛМӘ** *с. иҫк.* Етеҙ йөрөшлө, елеп йөрөгән. *Елмә отряд.*

**ЕЛП** *оҡш.* Киҫкен хәрәкәт менән ҡапыл ҡуҙғалғанды, ҡапыл күренгән йәки юҡ булғанды белдергән һүҙ. *Елп итеү. Елп итеп килеп инеү. Елп итеп сығып китеү. Елп итеп һикереп менеү.* ■ *Нурйән инеү менән һуҙылып ятҡан егет елп итеп урынынан торҙо.* С. Кулибай. *Бирелгән аштар елп итеп ҡалды, кесе телгә лә йоҡманы.* Д. Юлтый.

**ЕЛПЕЛДӘК** *и. диал.* Ҡатмар, мәскәү.

**ЕЛПЕЛДӘТЕҮ** *к.* **1.** Елп-елп иттереү; еңел генә елберләтеү. *Ҡара еләненең оҙон салғыйҙарын елпелдәтеп, мулла түргә уҙҙы.* З. Биишева.

**2.** Тиҙ, ҡапыл һәм еңел хәрәкәт итеү. *Муллайән Садрисламды санаһына .. елпелдәтеп күтәреп ырғытты.* Ф. Иҫәнғолов.

**ЕЛПЕЛДӘҮ** *к.* **1.** Елп-елп итеп елгә ҡағылыу, тирбәлеү. *Уҫаҡ япрағы елһеҙ көндә лә елпелдәй.* ■ *Текте әсәйем миңә аҡ күлдәк, атлаған һайын тора елпелдәп.* К. Кинйәбулатова.

**2.** *р. мәғ.* Елпелдәп, еңел хәрәкәт менән тиҙ генә, ҡапыл. *Өҫтөнә йоҡа ғына аҡ күлдәк кейгән етен сәсле бер ҡыҙ бала елпелдәп килеп сыҡты.* Ҡ. Ибәтуллин.

**ЕЛПЕЛДӘШЕҮ** *к. урт. ҡар.* **елпелдәү** 1. *Елпелдәшеп осоу.* ■ *Ҡояш күтәрелә төшкән һайын .. күбәләктәр күҙҙең алдында елпелдәшеп сәскәләрҙе үбәләр.* И. Насыри.

**ЕЛП-ЕЛП** *окш.* **1.** Елгә елберләп торғанды белдергән һүҙ. *Елп-елп итеп елберләү. Елп-елп килеү.*

**2.** Еңел хәрәкәтте белдергән һүҙ. *Елп-елп атлап Сәләх бара, бер кемгә лә сәләм бирмәй.* Т. Арслан.

**ЕЛПЕНДЕРЕҮ** *к.* **1.** Ҡанат ҡаҡтырыу; талпындырыу. *Ҡошто елпендереү.*

**2.** *ҡар.* **елпенеү** 1—3. *Ҡош ҡанаттарын елпендерҙе.*

**3.** *күсм. һөйл.* Шашындырыу.

**ЕЛПЕНЕҮ** *к.* **1.** Ҡанат ҡағыу; талпыныу. *Ул [ҡаҙ] бер-ике тапҡыр ҡанат ҡағып елпенеп алды ла, залды яңғыратып .. ҡысҡырып ебәрҙе.* З. Хисмәтуллин. / Осҡан һымаҡ итеп һелкеп ҡул ҡағыу. *Балалар зарядка яһайҙар, .. матур итеп елпенәләр.* Р. Низамов.

**2.** Елгә ҡағылып һелкенеү; елберләү. *Талғын елгә елпенеп, йәш йүкәләр хушбый ҡатыш сәскә еҫе бөркәләр.* М. Тажи. *Уттар көйрәй, уттар елпенә.* Д. Юлтый.

**3.** Ел ҡуҙғатып, еңелсә үҙеңә елпеү. *Миндек менән елпенеп алыу. Эҫенән елпеүес менән елпенеп ултырыу.*

**4.** Яман ел шауҡымы ҡағылыу, ел тейеп ауырыу. *Бала елпенеп ҡуймаһын.*

**5.** *күсм. ҡар.* **елкенеү** 3.

**6.** *диал. ҡар.* **елһенеү** 1.

**ЕЛПЕТЕҮ** *к.* **1.** Талпынып ҡағыу (ҡанатты). *Тау битендә торған бер һәйкәлгә, ҡанаттарын йәйеп, елпетеп, .. килеп ҡунды Урал бөркөтө.* М. Иҙелбаев.

**2.** Ел ҡуҙғатып берәй нәмә менән һелкеү, елберләтеү. *Ел-ел итә, ел итә, аттың ялын елпетә.* Х. Ғиләжев. *Бай күлдәген елпетеп, тир һыуыта ине.* И. Көҫәнҡол. / Ҡапыл һелкеү.

**ЕЛПЕҮ**[1] *к.* **1.** Талпынып ҡағыу (ҡанатты); һелкеү. *Ҡанат елпеп ҡағыныу.* ■ *Баш осонан ҡанаттарын елпеп, күгәрсендәр осоп үтте.* Ш. Шаһәр. *Аҫыл ҡоштар ҡанат елпеп, ярышып моңдар һуҙғанда, йырлай-йырлай .. еләк тирҙем урманда.* А. Игебаев.

**2.** Ел ҡуҙғатып бер нәмәне һелкеү. *Күлдәгемде елпей-елпей тир ҡатырып, сәй эсеп ултырғанда, бер малай килеп инде.* Ф. Иҫәнғолов. / Ҡапыл-ҡапыл һелкеү; болғау. *Беҙҙе яулыҡ елпеп оҙатып ҡалдылар.*

**3.** Елгә ҡағылыу, елбер-елбер итеү; елберләү. *Елпей урамдарҙа ҡыҙыл байраҡ, бөгөн байрам, бөгөн ҙур шатлыҡ.* Д. Юлтый.

**4.** Ҡапыл һелтәп күтәреү; сорғотоу. *Елпеп алыу.* ■ *Ҡарап торғанығыҙ бармы һеҙҙең бесәнсенең кәбән ҡойоуын? Бер күбәне тотош сәнсеп алып, гәйрәт менән уны елпеп һалып, наҙлап ҡына ҡағып ҡуйыуын.* Р. Сафин.

**5.** *күсм.* Хискә, дәрткә тулышып ярһыу; ашҡыныу, елкенеү. *Ҡыҫҡа төнлө йәйге айҙарҙа күңел елпей, .. аяҡтарым тарта тауҙарға.* С. Кулибай.

**6.** *диал. ҡар.* **елгәрәү** 1. *Ашлыҡ елпеү.*

**ЕЛПЕҮ**[2] *и.* **1.** Һауаны тулҡынландарған етеҙ хәрәкәт. *Елпеү еле. Ҡул елпеүе.* ■ *Түрҙән түбәнгә, түбәндән түргә уҙған һәр бер кешенең аяҡ елпеүенән саң күтәрелә.* Т. Хәйбуллин.

**2.** *күсм.* Боронғо хөрәфәт буйынса, насар шауҡым. *Елпеү ҡағылыу. Елпеү һуғылыу. Ҡойондоң елпеүе тейеп, бала сәсрәп ауырып киткән.*

**ЕЛПЕҮ**[3] *с.* Елберләп осоп тирбәлеп торған; еңел. *Елпеү байраҡ. Елпеү япраҡ.* ■ *Тәненә һылашып торған елпеү ҡара күлдәк кейгән .. ҡыҙ Сағыл моронона .. ҡарай йүнәлде.* Х. Ғиләжев. Ел тирмәне елпеү елдәргә ҡанаттарын болғап әйләнә. Ғ. Амантай.

**ЕЛПЕҮЕС**[1] *и.* **1.** Еләҫ алыу өсөн биткә ел елпетә торған нәмә. *Ҡауырһын елпеүес. Елпеүес менән елпеү.*

**2.** Елгәргес машинаның елпей торған ҡанаты. *Елгәргес машина зырлай, елпеүесе дырылдай.* Б. Вәлит.

**3.** *күсм.* Ҡоштоң йәйенке ҡойроҡ осо. *Тумыртҡаның ҡойроҡ һабағы ныҡ .. була, ә елпеүесе ослайып тора.*

**ЕЛПЕҮЕС**[2] *и. диал.* Һуҡыр шәм.

**ЕЛПЕҮЕС**[3] *и. диал.* Һелкеүес.

**ЕЛПӘ: етен елпәһе** етендең иләү өсөн әҙерләнгән иң яҡшы сүсе.

**ЕЛПӘҘӘ** *и. диал.* **1.** *ҡар.* **елпеүес**[1].

**2.** Төнлөк.

**ЕЛПӘҢЛӘҮ** *к.* Еңел хәрәкәт итеү, елпелдәү. *Елпәңләп атлау. Елпәңләп йөрөү. Елпәңләп килеп инеү.* ■ *— Балам, Сәхибә! — тип [ҡарт] талған күлдарын болғап ҡысҡырҙы, ат юлына елпәңләп сыҡты ла, тағы тауыш бирҙе.* Ғ. Хәйри.

**ЕЛПӘҪ** *с.* Елгә елберләп торған; еңел; елпеү. *Елпәҫ ҡанаттарын елпеп елкән елә.* А. Игебаев.

**ЕЛСӘ** *и. диал.* Лауыр.

**ЕЛТ** *окш. ҡар.* **йылт**[1].

**ЕЛТЕЛДӘТЕҮ** *к.* Аяҡ, кәүҙәне тиҙ-тиҙ генә еңел ҡуҙғатыу. *Хасбулат олатай .. ҡапыл боролдо ла, елтелдәтә баҫып, ҡаршы стена яғына китте.* З. Биишева.

**ЕЛТЕЛДӘҮ** *к.* Өтәләнеп, тиҙ-тиҙ генә еңел ҡуҙғалыу. *Елтелдәп атлау.* ■ *Яланбикә елтелдәп килеп инде.* Һ. Дәүләтшина.

**ЕЛТЕРЛӘҮ** *к. ҡар.* **елтелдәү.**

**ЕЛТЕРӘКЛӘТЕҮ** *к.* Һелкетә-һелкетә атлатыу; елтерәтеү. *Елтерәкләтеп индереү.* ■ *[Егет ҡартты] елтерәкләтеп алып сығып, һаҡалы менән оҙон бер ағасҡа бәйләп ҡуйған* (Әкиәттән).

**ЕЛТЕРӘКЛӘҮ** *к.* Еңелсә, елп-елп итеп, тиҙ-тиҙ генә ҡуҙғалыу; елтелдәү. *Ул [Юлдаш әбей] елтерәкләп йөрөп, алдағы өйҙөң урындыҡ аҫтын йыйыштыра башланы* (Хикәйәттән).

**ЕЛТЕРӘТЕҮ** *к.* Тиҙ-тиҙ генә, ҡабалан һөйрәкләп атлатыу. *Елтерәтеп алып килеү.* ■ *Офицер ҡарсыҡты ҡулынан тотоп, елтерәтеп .. сығарып ебәрҙе.* С. Ханов. / Тиҙ-тиҙ генә, ҡабалан ҡуҙғатыу, алыу. *Йәнеш ҡайнап ташып киткән еҙ самауырҙы елтерәтеп йөҙлөк буйына алып килеп ултыртты.* З. Биишева. **Елтерәтә баҫыу** (*йәки* **атлау**) етеҙ һәм ышаныслы, ныҡ баҫыу йәки атлау. *[Мәҙинә:] һеҙ әле бер ҙә бирешмәйһегеҙ Ҡәҙерғол олатай: етеҙ егеттәр кеүек елтерәтә баҫып йөрөйһөгөҙ.* Н. Иҙелбай. *Абдулла тракторынан төштө лә елтерәтә баҫып Фәйзулла эргәһенә килде.* Р. Ғабдрахманов.

**ЕЛТЕРӘҮ** *к. ҡар.* **елтелдәү**. *Елтерәп атлау. Елтерәп сығып китеү.* ■ *Ниязғол әсенә һыймаған асыуы ыңғайына елтерәп атлап бара торғас, уйына килгән бер яңылыҡтан .. кылт туҡтаны.* Һ. Дәүләтшина.

**ЕЛТӘКӘЙ** *и.* Еңел холоҡло кеше.— *Шуның менән генә әүрәтә шул Сәкинә беҙҙең ише елтәкәйҙәрҙе.* В. Нафиҡов.

**ЕЛТӘН-ЕЛТӘН** *окш.* Тиҙ-тиҙ генә, еңел ҡуҙғалғанды белдергән һүҙ. *Елтән-елтән атлау. Елтән-елтән итеү.* ■ *Турғай төштө әпсән-әпсән осоп, .. елтән-елтән бахыр ем эҙләй.* К. Кинйәбулатова.

**ЕЛТӘНЛӘҮ** *к.* Өтәләнеп ҡапыл-ҡапыл баҫыу; елтән-елтән итеү. *Елтәнләп атлап китеү. Елтәнләп сығып китеү.* ■ *[Әсәйем] мин аяҡты сискәнде лә көтмәй, елтәнләп яныма килеп тә етә.* К. Кинйәбулатова.

**ЕЛФАЙ** *и. диал.* Елғыуар.

**ЕЛФЕРСӘК** *и. диал.* Ҡолаҡ йомшағы, йәрпесәк.

**ЕЛФРУЗ** [*фарс.*] *с. һөйл.* Осоп-төшөп торған еңел холоҡло, остоҡай (йәштәргә ҡарата әйтелә). *Елфруз ҡыҙ.* ■ *Өйләнеү күптәрҙе дөрөҫ юлға баҫтыра, ә был — кесе ваҡыттан иркә үҫкән ике елфруздың дөрөҫ юлға баҫтырыу бигерәк тә кәрәк ине.* М. Кәримов.

**ЕЛҺЕНЕҮ** *к.* **1.** Һыуыҡ, ел тәьҫиренә ҡыҙарыу, ярылыу. *Елгә елһенеү. Бите елһенгән.*

**2.** *ҡар.* **шешенеү**. *Аяғы елһенгән. Күҙ ҡабағы елһенгән.* ■ *Йоҡлауҙан уның [Әксәндең] күҙҙәре елһенгәйне.* И. Абдуллин. *Ул [Билалов] ныҡ арыны, өҫтө-башы керләнде, ял күрмәгәнлектән күҙ ҡабаҡтары елһенде.* Д. Исламов.

**ЕЛҺЕТЕҮ** *к.* **1.** Ҡояшҡа, елгә әҙ генә киптереү; еләтеү. *Игенде елһетеү.*

**2.** Һыуыҡ, ел тәьҫире тейеп шешенеү. *Битте елһетеү.*

**ЕЛҺЕҮ** *к.* **1.** Ҡояшҡа, елгә әҙ генә кибеү; елләү. *Комбайнер игендең елһегәнен көтә.*

**2.** Һыуыҡҡа, елгә елһенеү, шешенеү. *[Мәғфүрәнең] ике тамсы йәш бөртөгө яҙғы елгә елһеп, ҡояшҡа тутлаған бите буйлап әйәгенә тәгәрләп төштө.* Һ. Дәүләтшина.

**3.** Ел үтеп һыуыу. *Ҡырҡ ҡораулы тәҙрәләр көслө елдең өрөүенә түҙмәй көйөҫ-көйөҫ сылтырап китә.. Өй эсе елһеп, ел уйнап тора.* Ғ. Дәүләтшин.

**ЕЛӘГӘЙ** *с.* **1.** Әҙ генә елле; еләҫ. *Еләгәй урын. Еләгәй булыу.*

**2.** *диал.* Өлгөр, етеҙ, сос. *Еләгәй егет.*

**ЕЛӘҘ** *с. ҡар.* **еләҫ** 1. *Еләҙ ел. Еләҙ ер. Еләҙ көн. // Киске еләҙ.* ■ *Айбулат .. саҡ ҡына [иҫкән] еләҙгә битен ҡуйып, тәрән тын алды.* Һ. Дәүләтшина.

**ЕЛӘҘЕТЕҮ** *к. әйһ. ҡар.* **еләҙеү**. *Талғын ғына ел иҫеп, еләҙетеп ебәрҙе.* ■ *Кискә табан еләҙетте. Ямғыр туҡтап, бер аҙ еләҙеткәс, комбайндар арышҡа төштө.* «Совет Башҡортостаны», 1970, 5 сентябрь.

**ЕЛӘҘЕҮ** *к.* Еләҙгә әйләнеү, еләҙ булыу. *Көн еләҙене. Тәҙрәне асҡас, өй эсе еләҙеп китте.*

**ЕЛӘК** *и.* Роза сәскәләре ғаиләһенә ҡараған тамырынан сыҡҡан мыйыҡтары ярҙамында үрсей торған аҡ сәскәле, һутлы, тәмле ҡыҙыл емешле үҫемлек. *Ер еләге. Еләк сәскәһе. Еләк ултыртыу. Еләк сәскә атҡан.* / Шул үсемлектең емеше. *Еләк бәлеше.* ■ *Еләк ваҡыты үтеп бара, күп итеп йыйығыҙ. Ҡышҡылыҡҡа ҡаҡ ҡойоп ҡуйырға кәрәк.* Ш. Шәһәр. *Һылыу ҡыҙҙар еләк йыя, тырыҙдарын әлеп беләккә* (Халыҡ йырынан).

◆ **Ағас** (*йәки* **айыу**) **еләге** *диал. ҡар.* **ҡурай еләге. Бүре еләге** ашарға ярамаған ҡыҙыл емешле ваҡ япраҡлы ҡыуаҡ. **Еләк кеүек** *йәки* **еләктәй** үҫеп буйға еткән таҙа, матур йәш ҡыҙҙарға ҡарата әйтелә. *Еләк кеүек ҡыҙ. Еләктәй сағы.* ■ *[Байрамбикә:] Һинең [Ниса] еләк кеүек йәшлегең бар. Һинең тормош юлың яңы башлана әле.* М. Хәйҙәров. *Бибигөлдөң еләк кеүек сағы.* Б. Бикбай. **Күк** (*йәки* **ҡара**) **еләк** көртмәлеләр ғаиләһенә ҡараған йылтыр ваҡ япраҡлы, алһыу сәскәле, ваҡ һабаҡлы ҡыуаҡ үҫемлек (ылыҫлы, ҡатнаш урмандарҙа, дымлы ерҙә үҫә); ҡара көртмәле. **Ҡайын еләге** роза сәскәлеләр ғаиләһенә ҡараған өсәр япраҡлы, тәпәшәк һабаҡлы, аҡ сәскәле алһыу ҡыҙыл төҫтәге хуш еҫле оҙонсараҡ еләк. *Яңы ғына бешкән ҡайын еләктәре, тамырға торған ҡыҙыл тамсы һымаҡ күҙҙең яуын алып тора.* Ғ. Вәлиев. **Ҡарағай еләге** *диал. ҡар.* **ҡайын еләге. Ҡурай еләге** роза сәскәлеләр ғаиләһенә ҡараған сәнскәк һабаҡлы ҡыуаҡ үҫемлек һәм шул үҫемлектең хуш еҫле алһыу емеше; әберсә. *Улар [Сәғиҙәләр] кеше бейеклек булып үҫкән ҡурай еләге араһына инеп киттеләр.* М. Тажи. **Мүк еләге** *шул уҡ* **ҡыҙыл көртмәле** (*ҡар.* **көртмәле**). **Таш еләге** *диал. ҡар.* **ҡайын еләге.** *Уң бармаҡайҙарың нигә ҡыҙыл таш еләкәйҙәре тирҙеңме?* (Халыҡ йырынан). **Торна еләге** *диал. ҡар.* **ҡурай еләге. Турғай еләге** *диал. ҡар.* **ҡайын еләге. Һаҙ еләге** көртмәлеләр ғаиләһенә ҡараған һаҙлы ерҙә түшәлеп үҫә торған ваҡ алһыу сәскәле ҡыуаҡ үҫемлек һәм шул үҫемлектең ҡыҙыл әсе емеше. *Һаҙ еләге күберәк мүкле урындарҙа үҫә.* **Эт еләге** *шул уҡ* **эт сейәһе** (*ҡар.* **сейә**). **Әпсә еләге** *диал. ҡар.* **ҡурай еләге. Әҫпе еләге** эт муйылы һымаҡтар ғаиләһенә ҡараған, япраҡтары бер-береһенә ҡапма-ҡаршы урынлашҡан, бер әнәле ваҡ сәскәле, һөйәкле, һутлы оҙонсараҡ емешле, сәнскеле ботаҡлы ҡыуаҡ үҫемлек.

**ЕЛӘК-ЕМЕШ** *и. йыйн.* Һәр төрлө еләк һәм емештәр. *Еләк-емеш баҡсаһы. Еләк-емеш магазины.* ■ *Беҙҙең Ирәндек буйында нәҡ бесән ваҡытында күп еләк-емеш өлгөрә.* С. Кулибай.

**ЕЛӘКЛЕ** *с.* Еләк күп үҫә торған, еләге булған. *Еләкле тау. Еләкле ер. Еләкле йыл.* ■ *Кәкүкле май, еләкле июнь, муйыллы июль артынан оҙатырбыҙ һине, август.* Й. Гәрәй.

**ЕЛӘКЛЕК** *и.* Еләк күп үҫкән урын. *Еләклеккә барыу. Еләклеккә тап булыу.* ■ *[Был егет] ҡыҙыл балаҫ кеүек булып ятҡан еләклектә аунай-аунай еләк ашаған.* Ғ. Ғүмәр.

**ЕЛӘКЛӘНЕҮ** *ҡ.* Еләктәрҙең сәскәһе ҡойолоп, еләге барлыҡҡа килеү, еләккә тумалыу. *Еләкләнгән ваҡыты.*

**ЕЛӘКСЕ** *и.* Еләк йыйыусы, еләк йыйыу менән шөғөлләнеүсе.

**ЕЛӘКСЕЛЕК** *и.* Еләк үҫтереү эше. *Еләкселек бригадаһы. Еләкселек совхозы. Еләкселек менән шөғөлләнеү.*

**ЕЛӘН** [1] *и. этн.* Ҡатын-ҡыҙҙарға биллəп, ситенә уҡа, түш-яурыны, бөйөрҙәренә тәңкә-мәрйен, уҡа-суҡтар баҫып, ҡашлы ҡаптырма ҡуйып, ә ирҙәргә ҡара тауарҙан киң, билһеҙ итеп тегелә торған эсе мамыҡһыҙ, оҙон өҫ кейеме. *Атлас елән. Батышай елән. Бәрхәт елән. Ебәк елән. Ҡытат елән. Мөһөрлө елән. Сога елән. Тәңкәле елән. Уҡалы елән. Әҙрәс елән. Елән бөркәнеү. Елән кейеү. Елән ябыныу.* ■ *Шәһит ҡарт, эңер баулы ап-аҡ күлдәк-ыштан өҫтөнә ҡара елән кейеп, .. урамға, үләнгә сығып ултырҙы.* З. Биишева. *Еңгәләре Фатимаға яңы күлдәген, .. салғыйы икешәр ҡат тәңкә менән уратылған уҡалы елән кейҙерҙеләр.* Ж. Кейекбаев. *Ҡара ҡытат елән ай иңемдә, ҡара ебәк билбау билемдә* (Халыҡ йырынан). **Елбәгәй елән** өҫкә кейелмәй торған, яурынға ғына һалына торған елән. *Ерәнсәй ҙә менгән ул [батыр], елбәгәй елән кейгән ул, еләлә сабып килә ул* (Ҡобайырҙан).

● *Ҡыш көнө ете елән кейгәнсә, бер ҡат тун кей.* Әйтем.

**ЕЛӘН** [2] *с. диал.* Елгер. *Елән ат.*

**ЕЛӘНЛЕК** *и.* Еләнгә тәғәйенләнгән тауар. *Еләнлек буҫтау.*

**ЕЛӘ-САБА** *р.* Бик етеҙ, шәп сабып. *Елә-саба китеү. Елә-саба үтеү.* ■ *Зөлкәрнәй Зөлхизәнең йыр тауышын ишеткәндәй бурыл толпарын аяңдатып елә-саба килеп тә еткән.* Н. Иҙелбай. *Елә-саба бара күк юрға* (Халыҡ йырынан).

**ЕЛӘ-СҮКӘ** *р.* Бер елеп, бер йәйләп. *Янбайҙың аты ла татаураған, тауҙы елә-сүкә саҡ барып сыҡҡан* (Әкиәттән).

**ЕЛӘҪ** *с.* **1.** Һалҡынса ғына еле булған, бөркөү, тынсыу булмаған (һауа, көн торошона ҡарата). *Еләҫ ел. Еләҫ көн. Еләҫ урын. Еләҫ йәйге кис. // Еләҫтә ял итеү. // Бында еләҫ.* ■ *Яҙҙың йомшаҡ еләҫ еле Емештең сәстәренән, керпектәренән һылап-һыйпап һөйә.* З. Биишева. *Киске еләҫ, рәхәт саф һауала йыр йырлайбыҙ.* М. Фәйзи. **Еләҫ алыу** еләҫ елдә, еләҫ урында елләнеү; һалҡын алыу. *Мырҙаш Юлай ауылы урамынан тарантаста бик әрә генә үтеп барғанда, асыҡ тәҙрә төбөндә еләҫ алып ултырған Хәйбрахман ... ҡул болға[ны]..* Д. Юлтый.

**2.** *күсм.* Йәшлек тойғоһо менән тулышҡан, елкенеп торған. *Еләҫ күңелле.* ■ *Илдә батыр күп булыр. Барсынһылыуҙың еләҫ күңеле ниндәй батырҙы хуп күрер?* «Алпамыша».

**ЕЛӘҪЛЕК** *и.* Еләҫ булған хәл. *Иртәнге еләҫлек. Киске еләҫлек.* ■ *Агиҙелдең киске еләҫлегә, урман, яландарҙың хуш еҫтәре .. уларҙың [ҡыҙҙарҙың] күлдәктәрен елберләтә, сәстәре менән уйнай.* Х. Мохтар. *Колхозға кәбән ҡоя сыҡҡайнылар. Нәгимә .. кәбән башында торҙо .. Ер өҫтөнә эңергә еләҫлек төшкәс, эштән туҡтанылар.* Ш. Янбаев.

**ЕЛӘҪЛӘНЕҮ** *ҡ.* Еләҫ, һалҡынса булып китеү. *Кискә табан көн еләҫләнеп китте.* ■ *Ҡалҡыу урынға сыҡҡас, көн дә бер аҙ еләҫләнә төштө.* М. Тажи. *Ҡаланы сыҡҡас, һауа еләҫләнде. Һулыштар бер аҙ иркенләп ҡалды.* Д. Юлтый.

**ЕЛӘҪЛӘТЕҮ** *ҡ. эйһ. ф. ҡар.* **еләҫләнеү.** *Хәҙер инде эңер ваҡыты етеп килә, арыу ғына еләҫләткән дә ине.* Ә. Вәли.

**ЕЛӘТЕҮ** *ҡ.* Ныҡ биҙҙереү, ялҡытыу. *Кәбировтың үҙенә үҙе ныҡ ышанған бер тонда һөйләшеүе уны [Искужинды] бик тиҙ еләтте.* Ә. Вәли. *Ялҡтҡан эш, зауыҡ эш — ирекле ил емеше. Ул арытмай ҙа, еләтмәй ҙә.* Ә. Байрамов.

**ЕЛӘТКЕС** *с.* Ялҡыта, йонсота торған, теңкәгә тейгес. *Еләткес ел. Еләткес буран.* ■ *Ләпәк һымаҡ ваҡ, еләткес ямғыр һибәләй.* Ә. Чаныш.

**ЕЛӘҮ** [1] *ҡ.* Гел бер төрлө йәки дауамлы күңелһеҙ нәмәнән йонсоу; ялҡыу. *Мин бында бик еләнем.. Күлдәк менән салбарҙы бирһәләр, бөгөн үк ҡайтып китер инем.* М. Кәрим. *Еҫле гөл еҫле булһа ла, еҫен еҫкәп еләнем* (Халыҡ йырынан).

**ЕЛӘҮ** [2] *ҡ. диал.* Елегеү. *Буре еләп йөрөй. Эт еләп, урман яғына сапты.*

**ЕЛ-ЯМҒЫР** *и. йыйн.* Ел һәм ямғыр. *Көҙгө бысраҡ көндәр, ел-ямғырҙар, ҡырҙар иңләп һибә һалҡын тамсылар.* Д. Юлтый.

♦ **Ел-ямғырға эләгеү** *йәки* **ел-ямғыр тейеү** ауыр хәлгә ҡалыу, ауырлыҡ тейеү. *[Хафиз ҡарт:] Ә мин һине утындан өҙмәм, мин барҙа һиңә ел-ямғыр теймәҫ.* М. Тажи.

**ЕМ** *и.* **1.** Ҡош-ҡорт, балыҡ ашай торған һәр төрлө аҙыҡ. *Балыҡ еме. Тауыҡ еме. Ем ашау. Ем биреү. Ем сүпләү. Ем тибеү. Ем һибеү.* ■ *Урман ҡошо ҡыҙ усынан емдәр суҡый, үҙе суҡый, үҙе гүйә рәхмәт уҡый.* М. Кәрим. *Балығы ҡаба емһеҙ ҙә, ҡармаҡ һалһа йүнһеҙ ҙә* (Ҡобайырҙан). / Малға бирелә торған иген аҙыҡ (һоло, көрпә һ. б.). *Ҡолон аҙбарында бесән һалыр өсөн утлыҡ, ем һалыр өсөн һауыт булырға тейеш.* М. Ғәбәйҙуллин.

**2.** Ашар аҙыҡ, ашамлыҡ. *Өйҙә зәррә кәҙәр булһын ем дә юҡ.* М. Ғафури.

**3.** Игендең аҙыҡҡа файҙаланыла торған орлоғо. *Тос емле ашлыҡ. Селбәрә эре булһа, ашлыҡ емгә туҡ булыр.* **Ем алыу** (*йәки* **йыйыу**), **емгә ултырыу** орлоҡланыу (игенгә ҡарата). *Күптән арыш ем алған, алтын башаҡтар ярған.* Д. Юлтый.

**4.** Ҡаты ҡабыҡлы төрлө орлоҡтоң эске өлөшө.

*Ҡабаҡ орлогоноң еме. Көнбағыш еме. Сәтләүек еме.*

● *Балалы ҡаҙға ем теймәй.* Мәҡәл. *Ҡыҙғанғаның ҡыҙыл эткә ем булыр.* Мәҡәл. *Ере барҙың еме бар.* Мәҡәл.

**ЕМДЕК** *и.* **1.** Үлеп ятҡан хайуан; үләкһә. *Емдеккә йыйылған ҡарға.* ■ *Батшаның бик асыуы килә, хайуандарҙы салып, емдеген далаға, йыртҡыстарға, сүл бүреләренә ташларға ҡуша* (Әкиәттән). / *күсм.* Бик ябыҡ, кәрһеҙ малға ҡарата әйтелә.

**2.** *с. мәғ. күсм. әрл.* Эшкинмәгән, йүнһеҙ. *Этәлге тауы артынан барып таптым емдектәрҙе.* Б. Бикбай.

**ЕМЕЛДӘТЕҮ** *к. йөкм. ҡар.* **емелдәү.** *Ҡар өҫтөн емелдәтеү.*

**ЕМЕЛДӘҮ** *к.* Ем-ем итеү. *Йондоҙҙар емелдәй.* ■ *Унда, офоҡта, шыйыҡ ҡына аҡһыл томан булып монар емелдәй.* Ф. Иҫәнғолов. *Сәскәләрҙә иртәнге ысыҡ емелдәй.* З. Рафиков.

**ЕМЕЛДӘШЕҮ** *к. урт. ҡар.* **емелдәү.** *Күктә йондоҙҙар емелдәшә.*

**ЕМ-ЕМ** *оҡш.* Бер башлап ныҡ янып, бер һүнеп торған бәләкәй яҡтылыҡты белдергән һүҙ. *Ем-ем итеү.* ■ *Ем-ем итеп, ниҙер күҙләп, йондоҙҙар ергә ҡарай.* С. Ғәбиҙуллин.

**ЕМЕРГЕС** *с.* Емереү, тар-мар итеү ҡеүәтенә эйә булған; ҡыйратҡыс. *Емергес һөжүм.*

**ЕМЕРЕК с. 1.** Емерелеп, ҡыйрап төшкән. *Емерек йорт. Емерек мейес.* ■ *Емерек өйҙәр араһында төркөм-төркөм йөрөгән балалар өҫтөнә аэропландан бомба ташлайҙар.* Д. Юлтый. *[Әхмәт:] Мин уйланым, таяу табырмын тип, һөйрәтергә емерек өйөмдө.* Ғ. Сәләм.

**2.** *күсм.* Ҡараңғы сырайлы, асыулы. *Емерек ҡараш.* ■ *Һалдаттарҙың йөҙө емерек. Уларҙың бар теләге — тиҙерәк тамаҡ туйҙырып, бер-ике сәғәт күҙ йомоп алыу ҙа, [шунан] ысҡыныу.* Ф. Иҫәнғолов. **Ҡашы емерек** ҡашы төйөлгән, асыулы.

**ЕМЕРЕКЛЕК** *и.* **1.** Емерелгән, ҡыйраған нәмәләр; хараба. *Тыңлаусылар алдынан .. граждандар һуғышы ваҡытында татылған аҙаптар ҙа, бирелгән ҡорбандар, илгә яһалған емереклектәр ҙә .. бер-бер артлы үттеләр ..* Б. Бикбай.

**2.** Хужалыҡтың, экономик тормоштоң тулыһынса тарҡалған хәле. *Экономик емереклек. Емереклектә еңеп сығыу.*

**ЕМЕРЕЛЕҮ** *к.* **1.** Боҙолоп, ватылып ауыу. *Өй емерелгән. Стена емерелгән. Емерелеп төшөү.* ■ *Мейес емерелгән, тәҙрәләр юҡ, өй эсендә елдәр уйнай.* Б. Бикбай. *Сәмреғоштоң ҡанат осо әҙ генә ҡағылып киттеме — ҡая таштар емерелеп төшә икән, ти* (Әкиәттән).

**2.** Емерек хәлгә әйләнеү, боҙолоп, ватылып, ҡыйралыу, ватыҡ хәлгә килеү. *Емерелгән хужалыҡ. Ҡалалар емерелгән.* ■ *Беҙ һуғышҡан ерҙәрҙә емерелә ҡалалар* (Бәйеттән).

**3.** Убылып, ишелеп аҫҡа төшөү, аҫтағы бушлыҡҡа ауыу. *Ер емерелеп төшөү.*

**4.** *күсм.* Бөтөү, юҡҡа сығыу, тормошҡа ашмау (уй, хыял һ. б. ҡарата). *Өмөттәр емерелде.* ■ *Аһ!.. тиһең, шундуҡ бөтә сабырың, ҡарарың емерелә.* Ш. Бабич.

◆ **Бер мөйөшө емерелгән** нимәнеңдер теүәллегенә, именлегенә зыян килгән. *Тормоштоң бер мөйөшө емерелгән.* Б. Бикбай. **Емерелеп үҫеү** бик ныҡ уңыу (иген, емеш-йәшелсәгә ҡарата). *Ерәк емерелеп үҫкән.* ■ *Колхоз баҫыуҙарында ашлыҡ емерелеп үҫте, тормош яҡшырҙы.* Ф. Рәхимғолова. **Емерелеп ятыу** 1) тәртипһеҙ, бола хәлдә булыу. *Өй эсе бола, бөтә нәмә туҙып, емерелеп ята;* 2) *күсм.* эшләнмәгән көйө, күп көйө тороу (эшкә ҡарата). *[Муйылбикә:] Эш ҡалай емерелеп ята: иген тапалмаған, бесән ташылмаған, тиҙәк өйөлмәгән. Ҡуй инде!* Һ. Дәүләтшина. **Ер емерелгәндәй** яман көслө тауышҡа ҡарата әйтелә. *Ер емерелгәндәй, гөр килде һауа.* Б. Бикбай. **Өҫкә емерелерҙәй булыу** бик текә, бейек булыу (тау-ташҡа ҡарата). *Урал тауҙарының өҫкә емерелерҙәй булып торған ҡая таштары, .. күҙ менән генә самалай алмаҫлыҡ тәрән-тәрән соҡорҙары, ҡурҡыныслы төпкөлдәре .. — барыһы ла, барыһы ла миңә таныш.* Б. Ишемғол.

**ЕМЕРЕЛМӘҪ** *с. ҡар.* **ҡаҡшамаҫ.**

**ЕМЕРЕҮ** *к.* **1.** Боҙоп, ватып, ауҙарыу; ҡыйратыу. *Ҡойманы емереү. Өйҙө емереү.* ■ *Эй, емерҙек, яндырҙыҡ һарайҙарҙы, диуарҙар шәфҡәтһеҙ ауҙылар.* Б. Ишемғол. / Өҫтән ҡыйратып, ишелдереү. *Түбә таҡтаһын емереү.* ■ *Барсынһылыуҙың әйткәне: «Батыр булһа, тос булыр, .. ултырһа, уба емерер, таянһа, тау емерер».* «Алпамыша».

**2.** *күсм.* Йәнсеү, иҙеү. *Ауыҙ-моронон емереү. Тешен емереү. Емерә һуғыу.* ■ *[Әхмәҙи:] Тағы ҡабатлай торған булһаң, мороноңдо емерермен.* Ә. Бикчәнтәев.

**3.** *күсм.* Юҡҡа сығарыу; боҙоу. *Дуҫлыҡты емереү. Ышанысты емереү.* ■ *Кәйефте емерерлек шул ундағы хәлдәр, йөрәктә дауыл ҡуптарырлыҡ.* Ғ. Шәрипов. *Һыҙғанып ныҡ йәш беләкте иҫке тормошто емер!* Т. Йәнәби.

**4.** Хәл ҡылымдың *-п* формаһында килеп, эш-хәрәкәттең юғары дәрәжәһен белдерә. *Емереп ашау. Аҡсаны емереп алыу. Емереп донъя көтөү.*

◆ **Донъя емерерҙәй булыу** бик ныҡ ярһыу. *Донъя емерерҙәй булып эшләү.* ■ *Председатель донъя емерерҙәй булып: «Кем газетаға яҙҙы, әйтегеҙ! Ҡарттар, аҙағы яҡшы булмаҫ!» — тип ҡысҡырҙы.* Б. Ишемғол. **Емереп алып барыу** эш һ. б. ҡыҙыу дәрт менән тотоноу, ҡыҙыу алып барыу. *Студенттар эшкә бик әрһеҙ, емереп алып баралар.* Ф. Иҫәнғолов. **Ер емереп** *ҡар.* **ер. Ҡашты** (*йәки* **ҡабаҡты) емереү** *ҡар.* **ҡаш** [1].

● *Себен тулап тәҙрә ватмаҫ, турғай тулап кәртә емермәҫ.* Мәҡәл.

**ЕМЕРЕШЕҮ** *к. урт. ҡар.* **емереү** 1, 2.

**ЕМЕРТЕЛЕҮ** *к. төш. ҡар.* **емереү** 1. *Емертелгән ҡала.*

**ЕМЕРТЕҮ** *к. йөкм ҡар.* **емереү** [1—3]. *Өйҙө емертеү.*

◆ **Ер емертеп йөрөү** *ҡар.* **ер. Ни емертеп ятаһың** *һөйл.* хәл һорашҡанда әйтелә. *[Ғәлимов:] Һаумыһығыҙ, иптәштәр! Ни емертеп ятаһығыҙ?* К. Мәргән.

**ЕМЕТ** *и. иҫк.* Аҙыҡ, ашамлыҡ.

● *Еметенә ҡарама, егетенә ҡара.* Мәҡәл.

**ЕМЕШ** *и.* **1.** Үсемлектең сәскә емшәненән үҫкән, эсендә орлоғо булған өлөшө. *Йөҙөм емеше. Оҫкаттың емеше. Эт муйылының емеше. Ҡыр емеше. Емеш ағасы. Емеш баҡсаһы. Емеш ваҡыты. Емеш биреү. Емеш йыйыу. Емеш тиреү. Емешкә йөрөү. Емешкә тумалыу.* ■ *Ә емештәрҙән ни теләһәң, шул бар: ҡарағат, бөрлөгән, сейә, муйыл, балан — бөтәһе лә, бөтәһе лә бар.* Н. Ҡәрип. / Ҡайһы бер ағас, ҡыуаҡтың һутлы, ашарға яраған, эсендә орлоғо булған нәмәһе.

**2.** *күсм.* Берәй эш, хәлдең һөҙөмтәһе. *Үҙ хеҙмәтеңдең емешен күреү.*

♦ **Ағыу** емеше *диал.* эт муйылы (*кар.* **муйыл**). **Айыу емеше** дымһылыраҡ ерҙә үҫкән итләс йыуан тамырлы, ҡыҙыл йәки ҡара емешле эре дарыу үләне. **Бүре емеше** миләүшә сәскәле, сағыу ҡыҙыл емешле, ваҡ сейә япраҡлы урманлы тау ҡыуағы. **Ҡара емеш** ябай япраҡлы, аҡ сәскәле, ҡарағусҡыл күк емешле ағас.

● *Емешле ағастың башы түбән.* Мәҡәл.

**ЕМЕШ-ЕЛӘК** *и. йыйн.* Төрлө емеш һәм еләктәр. *Емеш-еләк баҡсаһы. Емеш-еләк магазины.* ■ *Йәйен бабай балыҡ тотҡан, әбей емеш-еләк йыйған* (Әкиәттән).

**ЕМЕШ-ЙӘШЕЛСӘ** *и. йыйн.* Емеш, еләк һәм төрлө йәшелсә. *Емеш-йәшелсә магазины. Емеш-йәшелсә етештереү.*

**ЕМЕШЛЕК** *и. бот.* Сәскәнең инәлек ағзаһы (ауыҙ, еңсә һәм емшәндән тора).

**ЕМЛӘНЕҮ** *ҡ.* Емлегә, орлоҡлоға әйләнеү. *Яуһын ҡырҙарыма буйлап-иңләп, ашлыҡтарым үҫһен емләнеп.* Д. Юлтый.

**ЕМЛӘҮ** *ҡ.* **1.** Ем ҡатыу, ем эләктереү (ҡармаҡҡа). *Сәләүсен менән емләү.* ■ *Зәкирйән ҡармаҡтарын емләп, һыуға ташланы.* Р. Низамов.

**2.** Ем һалыу, ем ҡуйыу (бал ҡорттарына). *Умартаны емләү.*

**3.** Бал-шәкәр өҫтәү (әсе балға). *Ғариф ҡатынына .. көрәгә менән әсеп ултырған балды емләп, яңыртып ҡуйырға ҡушты.* Ж. Кейекбаев.

**4.** *һөйл.* Сәтләүек һ.б. орлоҡло емештәрҙең емен ярыу. *Өрөктө емләү.*

**ЕМТЕК** *и. кар.* **емдек.**

**ЕМҺЕНЕҮ** *ҡ.* Ем, аҙыҡ эҙләү. *Таш араһында емһенеп йөрөгән ҡыҙылғанаттар, алабуғалар уның [Юлдаштың] аяғы тирәһенә йыйылды.* З. Биишева. / *күсм.* Төрлө ергә төртөнөү, еҫкәнеү; һемтәңләү. *Уттай эш ваҡытында, емһенгән мал шикелле, ары һуғылып, бире һуғылып йөрө инде!* Р. Низамов.

**ЕМҺӘК** *с.* Күп ашарға яратҡан, ашауға әүәҫ; ашамһаҡ (малға, ҡош-ҡортҡа ҡарата). *Ысынлап та ошо байтал бәләкәй генә ҡолон сағынан уҡ миңә яҡын, үҙе гәжәп емһәк булды.* Ғ. Ишбулатов.

**ЕМШЕҮ** *ҡ. диал.* Имшеү.

**ЕМШӘН** *и. бот.* Емешлектең орлоҡ ярала торған аҫҡы өлөшө.

**ЕМШӘҮ** [1] *ҡ.* Ем суплау. *Балыҡ емшәй. Ҡош емшәй.* ■ *Яр башында ҡаҙ үҙенең бәпкәләре менән емшәп йөрөй икән* (Әкиәттән). / *күсм.* Әҙләп кенә бөртөкләп ашау.

**ЕМШӘҮ** [2] *и.* Ҡош-ҡорт ашай, ем суплай торған урын. *Һунар ваҡыты уҙған, ҡоштар емшәүҙән киткән.* Б. Хәсән. *Һауаларҙан оҫҡан әй ҡаҙ микән, емшәүҙәре уның һаҙ микән* (Халыҡ йырынан). / Ҡоштарға ем һалыу өсөн эленгән таҡта. *Емшәү элеү.*

**ЕМӘРЕШ** *с. диал.* Беше (туҡымаға ҡарата).

**ЕМӘТӘҮ** *и. диал.* Бөрләтәү.

**ЕН** [*ғәр.*] *и.* Хөрәфәт буйынса, төрлө һүрәткә инә ала торған мәкерле зат. *Ен балаһы. Ен батшаһы.* ■ *Ерәнсә сәсән Әлүкәй менән ен ҡыҙын елдертеп кенә алып килеп ултыра, ти* (Әкиәттән). **Ен туйы** 1) иҫке хөрәфәтсә, ендәрҙең байрамы; 2) *күсм.* бик шаулы, болалы мәжлес.

♦ **Ен [алғыры]** әрләгәндә, ҡарғағанда әйтелә. *Әсәһе ҡыҙына асыуланып, бер һөйәк алды ла: «Мә, ен!» — тип атып ебәрҙе, ти* (Әкиәттән). **Ен алыштырыу** иҫке хөрәфәт буйынса, сабый баланы яңғыҙ ҡалдырһаң, йәнәһе, ен кеше балаһын алып, уның урынына үҙенекен һалып китә, шул бала ғәрип, зәғиф була. *Балаһын ен алыштырған.* ■ *— Теге мәлгүндең ен алмаштырған балаһын бирәүһе шунда үлтереп ташлаһа, сауаплы булыр ине.* Д. Юлтый. **Ен аралау** *кар.* **аралау. Ен ботағы** артыҡ шаян, шуҡ баланы орошоу, әрләү һүҙе. **Ене кеүек күреү** бик ныҡ яратмау. *Бер суфый минең комсомоллыҡты ене кеүек күрә.* С. Агиш. **Ене тотоу** (*йәки* **ҡубыу**) яман ныҡ ярһып туҙыныу; енләнеү. *[Биктимерҙең бисәһе:] Атаҡ-атаҡ, енең тоттомо әллә?! Ниңә токтомалға мине төрткөләйһең?!* Б. Ишемғол. **Енен өҙөү** (*йәки* **туҙҙырыу, тарытыу**) 1) бик ныҡ әрләү; өҙгөләп, йолҡҡолап ташлау. *Өҙәйек енен ҡара йыландың.* Ғ. Ғүмәр; 2) бик ныҡ ҡыҙыулатыу; дыу килтереү. *Эштең енен тарыта беҙҙең бригадир.* Т. Килмөхәмәтов. **Енен сәсеү** яман ярһыу. *Был өйҙә енен сәсеп торған бер Мәскәй әбей тора икән* (Әкиәттән). **Ене һөймәү** бик ныҡ яратмау. *Әҙәм затының йыуанын, өҫтәүенә күп ашағанын енем һөймәй [тине Орлов]..йыуан әҙәм .. убыр була, быны медицина фәне лә дөрөҫләй.* С. Кулибай. **Ене һуғылыу** ниҙеңдер тәьҫире, шауҡымы тейеү, нимәгәлер көслө дәрәжәлә бирелеү. *Фәхри ерәненән айырыла буламы һуң, уға ат ене һуғылған бит.* Б. Бикбай. **Ен кеүек** 1) бик ныҡлы, шәпле. *— Иҫәнме, Андрей ағай! — Ен кеүек.* Ш. Шәһәр; 2) бик ҡыҙыу, ярһыу. *Ен кеүек эшләү.* **Ен күсе** иҫке хөрәфәтсә, күсеп йөрөгән ен өйөрө. **Ен ҡағылыу** (*йәки* **һуғылыу**) хөрәфәт буйынса, төрлө насар тәьҫир, шауҡым тейеп ауырыуға әйләнеү; зәхмәт ҡағылыу. **Ен ҡасырыу** *кар.* **ҡасырыу** [1]. *— Ғәләүҙәргә барҙым. Улына ен ҡағылған, өшкөртөргә саҡырҙылар.* М. Ғафури. **Ен оялау** *кар.* **ен ҡағылыу. Ен һуғыу** *кар.* **ен ҡағылыу.** *[Сыуаҡай әбей] әллә ниндәй ен һуҡҡан .. кешеләр тураһында ҡурҡыныс һүҙҙәр һөйләне.* З. Биишева. **Ен әйәләшеү** (*йәки* **әйәләү**) иҫке хөрәфәтсә, яңғыҙ йәшәгән ҡатын-ҡыҙ, ир-атҡа ниндәйҙер икенсе зат әйәһе килеп йөрөү һәм шул сәбәптән ныҡ ябығып, ауырыуға әйләнеү. *Ауыҙ асып аптырауҙан һүҙһеҙ ҡалған малайҙар бер-береһенә ҡараштылар. — Малайҙар яҡын бармайыҡ. Төтөктөң ене күсеп ҡуйыуы бар. Уға ен әйәләшкән.* Я. Хамматов.

● *Яҡшы ҡатын йән кеүек, яман ҡатын ен кеүек.* Мәҡәл.

**ЕН-БӘРЕЙ** *и. йыйн.* Ем һәм бәрей кеүек төрлө мифик заттар. Ен-бәрей тигән нәмәләр әҙәм балаларына зыян-зарар килтерергә ҡасд итеп кенә торалар. М. Ғафури. .. *Нәгрә орҙо, сур кеүек, бер торбанан ен-бәрейҙәр сыҡты һикреп мөрйәнән.* Ш. Бабич.

**ЕНЕС** [*гәр.*] *и.* **1.** Организмдың үрсеү өсөн хеҙмәт иткән һәм шуның буйынса ата һәм инә затына айырып булған аталыҡ-инәлек билдәләре йыйылмаһы. *Енес ағзаһы. Енес күҙәнәге. Ике енесле үҫемлек.* ■ *Кешенең енесен билдәләгән төп ағза ирҙәрҙә — орлоҡлоҡ, ҡатын-ҡыҙҙарҙа — йомортҡалыҡ.* В. Ғүмәров. / Шул билдәләрҙең береһенә эйә булған зат, кеше. *Ир енесе. Ҡатын-ҡыҙ енесе.* ■ *[Ҡатыным] табындағы бөтә ир-ат енесен хайран ҡалдырҙы.* Й. Солтанов.

**2.** *һөйл.* Нәҫел, нәсәп. *Ят енес. Башҡорт енесе.*

**ЕНЕСЛЕ** *с. бот.* Енесе булған, енескә мөнәсәбәтле. *Бер енесле сәскә. Енесле булыу. Енесле үрсеү.*

**ЕНЕСҺЕҘ** *с. бот.* Енесе юҡ, енескә мөнәсәбәтһеҙ. *Енесһеҙ сәскә. Енесһеҙ үрсеш. Енесһеҙ үҫемлек. Енесһеҙ булыу.*

**ЕНЛЕ** *с.* Иҫ-аҡылдан яҙып ҡоторған; юҡ-барға сәбәпле-сәбәпһеҙ ҡыҙып барыусы; ҡыҙмалы. *Енле кеше. Енле булыу.*

**ЕНЛӘНДЕРЕҮ** *к.* Ныҡ ярһытыу, ҡотортоу. *Кешене енләндереү.*

**ЕНЛӘНЕҮ** *к.* Ныҡ итеп ҡыҙып китеү, ярһыу. *Поленов енләнеп, .. наган көбәген Хисмәтулланың күкрәгенә терәне.* Я. Хамматов.

**ЕН-ПӘРЕЙ** *и. ҡар.* **ен-бәрей.**

**ЕНСЕК** *и.*, **енсек һөйәге. 1.** Аяҡтың тубығы менән бәкәле араһындағы ҡуш һөйәк. *Аяҡ енсеге.* ■ *Вагондан рельсҡа йығылып төшкәйнем, уң аяҡтың енсегенә тура килде. Ул ныҡ ауыртҡа торған ер икән: һындарым китеп яттым.* Д. Юлтый.

**2.** Ҡулдың терһәге менән ҡушҡары араһындағы ҡуш һөйәк. *Ҡул енсеге.*

**ЕНСИ** [*гәр.*] *с.* Енескә мөнәсәбәтле, енес менән бәйле. *Енси ағза. Енси мөнәсәбәт. Енси тойғо. Енси тәрбиә. Енси үрсеш.* ■ *Роберт .. ҡатын-ҡыҙ тураһында, енси тормошто бик яҡшы белгән кеше кеүек, ентекләп .. һөйләй.* А. Карнай.

**ЕНТ** *и.* Кипкән ҡыҙыл эремсекте тартып, май, шәкәр ҡушып яһаған ашамлыҡ.

**ЕНТЕК** *и.* Ниҙеңдер эстәлегендәге һәр төрлө ваҡ нескәлек. *Юлия әллә ҡасан булып үткән был ваҡиғаларҙың һәр бер ентеген, әлбиттә, хәтерләмәй ине.* Һ. Дәүләтшина.

**ЕНТЕКЛЕ** *с.* Бөтә яғы, ваҡ нескәлектәре иҫәпкә алынған, тулы. *Ентекле телмәр. Ентекле мәғлүмәт. Ентекле итеп һөйләү.* ■ *Әҫәрҙә Күсәк бейҙең Ҡарагөләмбәттән үс алыуы бик ентекле рәүештә бирелгән.* К. Мәргән.

**ЕНТЕКЛӘҮ** *к.* Бөтә ентеген, һәр төрлө ваҡ нескәлектәрен иҫәпкә алыу; төпсөү. *Ентекләп ҡарау. Ентекләп өйрәнеү. Ентекләп һорау. Ентекләп һөйләү.* ■ *[Аҡназаров] арышты ҡойоп, бик ентекләп тикшерҙе.* Ә. Вәли.

**ЕНУТ** *и. ҡар.* **янут.**

**ЕНӘЙӘТ** [*гәр.*] *и.* **1.** Йәмғиәттә кешеләр өсөн ҡурҡыныс тыуҙырыу менән бәйле булған, ғәмәлдәге тәртипте боҙған һәм закон тарафынан тыйылған эш. *Ҙур енәйәт. Енәйәт кодексы. Енәйәт эше ҡарау.* ■ *Ҡаҫҡы аҫрап яҡҡырыу енәйәт, .. быныһын яҡшы аңлай Шәүәли.* Б. Бикбай. *Эйе, ҡурҡаҡлыҡтан — хыянатҡа ла, енәйәткә лә бер генә аҙым шул.* З. Биишева.

**2.** Тәртип нормаларына һыймаған насар эш, ҡылыҡ. *Беҙҙең өсөн ҙур енәйәт — дошмандан ҡурҡып ҡасыу.* М. Сөндөклө.

**ЕНӘЙӘТЛЕ** *с.* Енәйәт (1 мәғ.) менән бәйләнгән, енәйәт булып һаналған. *Енәйәтле эш.*

**ЕНӘЙӘТСЕ** *и.* Енәйәт (1 мәғ.) ҡылған кеше, енәйәт эшләүсе. *Бына ике милиционер енәйәтселәрҙе залға алып керҙе.* Ғ. Әмири.

**ЕНӘЙӘТСЕЛ** *с.* **1.** Енәйәт эшенә тиҙ бирелеп барған, енәйәткә тартымлы. *Енәйәтсел мөнәсәбәт. Енәйәтсел булыу.*

**2.** Енәйәт эшләүгә ҡоролған, енәйәтле.

**ЕНӘЙӘТСЕЛЕК** *и.* Һәр төрлө енәйәт булыу хәле. *Енәйәтселек юлы. Енәйәтселеккә ҡаршы көрәштә милиция хеҙмәткәрҙәре алдынғы һыҙыҡта тора.*

**ЕҢ** [1] *и.* Өҫ кейеменең беләкте ҡаплай торған өлешө. *Ең осо. Ең төбө. Ең эсе. Ҡулдәктең еңе оҙон. Тун еңе. Ең уйыу. Ең ултыртыу.* ■ *Юҡты түгел, улым, ысын, — тине ҡарт, уның еңенән тартып тыйып. — Мин олатайҙар ҡашына китәм.* Б. Бикбай.

◆ **Ең һыҙғаныу** бөтә ихласлыҡты һалып тырышыу. *Ең һыҙғанып эшләү.* ■ .. *Ҡотлояр ағаң да япондарҙы туҡмарға китергә ең һыҙғанып ултыра инде, [тине Ҡотлояр Айбулатҡа].* Һ. Дәүләтшина. *Ҡартайһам да, һеҙҙең менән бергә ең һыҙғанып эшләрмен әле.* Т. Йәнәби.

● *Ең һыҙғанған егеттең тамағы туҡ.* Әйтем.

**ЕҢ** [2] *и. диал. ҡар.* **өн** 1.

**ЕҢГӘ** *и.* **1.** Ағайҙың ҡатыны. *Йәш еңгә. Оло еңгә. Уртансы еңгә. Еңгә булыу. Еңгә итеү.* ■ *Ирҙәр тағы ла хуплайҙар: — .. «Еңгәнең һылаҡай ҡабырғаһы ағайҙың үҙе тере саҡта уҡ ҡәйнештеке ул».* Һ. Дәүләтшина. / Уға өндәшеү һүҙе. — *Ямал еңгә, бына бынауы бәрҙеләрҙе һайлап ал,— тине [Тайморҙин].* М. Тажи. **Еңгә йөҙөгө** (*йәки* **янсығы**) боронғо йола буйынса еңгә булып килгән ҡыҙҙың ҡәйнеш, балдыҙҙарына таратҡан бүләктәре (йөҙөк, беләҙек, янсыҡ, ҡулъяулыҡ *һ. б.*). *Төшәр өйгә килгәндән һуң килендең яҡын бер ҡәйенһеңлеһе уның билен сисеп, билбауын алып китә лә бер нисә көндән аш-һыу менән билбауҙы килтереп, һыйлашып, еңгәһенән йөҙөк алып ҡайта.* М. Буранғолов. **Еңгә күреү** *этн.* өйләнгән егет ауылына кәләшен оҙатып алып ҡайтҡас та башҡарыла торған егеттең кесе туғандарының еңгәне күреү, танышыу йолаһы (ғәҙәттә еңгә кеше ҡайынһеңлеләренә бүләктәр өләшә). *Күршеләр үҙҙәренең ҡыҙҙарына: — Бар, анау Заһит ағайың еңгәнде алып ҡайтҡан, барып еңгә күрегеҙ, йөҙөк бирер,— тип ебәрәләр ине.* Һ. Дәүләтшина. **Еңгәне һыуға башлау** *этн.* яңы оҙатылып килгән киленгә ҡайынһеңле тейеш ҡыҙҙарҙың һыу юлын күрһәтеү йолаһы. *[Йомай әбей Зәлифәгә:] Еңгәнде һыуға башлағанда уның яурынына көйәнтәне*

*һин һалырға тейеш .. Барығыҙ, еңгәнде уртаға алығыҙ. Һыу алған көйәнтәне еңгәндең уң як яурынына күтәрт. Күтәрткән сакта «төклө аяклы, ырыҫлы, бәхетле бул»,— тип теләк теләп күтәрт. Ҡайтҡанда кабаланмағыҙ, .. ипле генә йөрөгөҙ. Ҡайтып еңгәң һыуын ҡуйғас та, һин уның биленән билғауын сисерһең. Шунан сәй эсербеҙ, йөҙөк өләшербеҙ.* Һ. Дәүләтшина.

**2.** Оло ир туғандарҙың ҡатындары. / Уларға өндәшеү һүҙе. *[Заһит:] — Еңгә, мин һиңә ҙур йомош менән килдем. Мин нисек тә булһа, бөгөн төндә Сафураны алып китер уй менән килгәйнем.* Һ. Дәүләтшина.

♦ **Ағай алғансы, еңгә килгәнсе** *ҡар.* **ағай** 1. **Еңгә ҡатын** элек ирҙә булып, икенсегә егет кешегә кейәүгә сыҡҡан ҡатын-ҡыҙ. *Еңгә ҡатын алыу.*

● *Ерек утын мурт була, еңгә ҡатын мут була.* Әйтем. *Еңгә ҡатында етмеш төрлө хәйлә була.* Әйтем.

**ЕҢГӘЙ** *и. ҡар.* **еңгә** (ғәҙәттә өндәшкәндә әйтелә). *Тулыбай .. ондо Вәлимә еңгәйгә килтереп бирҙе.* Ғ. Дәүләтшин. *[Барсынһылыу:] Торсо еңгәй .. тороп билең быусы, еңгәй! Йән серҙәшем булсы, еңгәм.* «Алпамыша».

**ЕҢГӘЛӘТӘ** *р.* Ҡыҙ кеше түгел, элек еңгә булған, еңгә көйө (бороңғо йола буйынса, ире үлгәс, ҡатын-ҡыҙ ҡәйнешенә кейәүгә сыҡҡан). *Еңгәләтә алған бисә. Еңгәләтә алыу. Еңгәләтә барыу.* ■ *Айбулат Бөрйән ырыуынан булған Алдар ҡарт мәрхүмдең еңгәләтә алған икенсе бисәһенән тыуған бала.* Һ. Дәүләтшина. *Минең әсәм еңгәләтә барған ҡәйнешенән булғанмын мин* (Хикәйәттән).

**ЕҢГӘСӘЙ**[1] *и. ирк. ҡар.* **еңгә.** *Аласа шаршау, ҡылыс бау, һин бәйләнең дә, еңгәсәй* (Сеңләүҙән).

**ЕҢГӘСӘЙ**[2] *и.* Арҡаһы ҡыҙыл, ҡара төрткөлө ҡуңыҙҙар ғаиләһеиә ҡараған бөжәк; ҡыр тараҡаны; сеңгәсәй. *Өйҙөң нигеҙен еңгәсәйҙәр һырып алған.* ■ *.. Көнгә сығырға, еңгәсәйҙәр кеүек ҡояшҡа арҡа йылытып алырға кәрәк.* З. Биишева. *Беҙҙә башҡорттар еңгәсәйҙе лә баҡаны ла үлтермәйҙәр* (Хикәйеттән).

**ЕҢДЕРЕҮ** *к.* Еңергә юл ҡуйыу. *Кешенән еңдереү.*

♦ **Күҙҙең ағын еңдереү** күҙҙең ағын әйләндереү, күҙҙе аҡайтыу. *Умәр ҡарт күҙенең ағын еңдереп Бәгиҙәгә ҡараны.* Ш. Янбаев.

**ЕҢЕЛ** *с.* **1.** Күтәрергә ауыр түгел, ергә тартым көсө бәләкәй; *киреһе* ауыр. *Еңел йөк. Еңел нәмә. Еңел таш. Еңел булыу. Еңел итеү.* ■ *Ул [һөнәрсе] яһаған касалар шундай нәфис, йоҡа, еңел булып сыға.* З. Биишева. *Малайҙар [арбанан төшөп] йүгерҙеләр ҙә йүгерҙеләр. Уларға ҡыҙыҡ, ә атҡа аҙ булһа ла еңел.* Б. Бикбай. / Ашҡаҙанда тиҙ үҙләшеүсән, тиҙ һеңеүсән, ашҡаҙанға ауырлыҡ килтермәгән, күп түгел, әҙ. *Еңел аш.* / Сағыштырмаса ауырлығы әҙ, ҡулланыуға уңайлы, йыйнаҡ (итеп яһалған). *Еңел арба. Еңел сана. Еңел көрәк. Еңел тырма.* ■ *Күҙ асып йомғансы булмай, пар туры аттар еңел сананы елдереп алып киттеләр.* Һ. Дәүләтшина. / Ҡалын түгел, йылы түгел; йоҡа. *Еңел кейем. Еңел күлдәк. // Еңел генә кейенеп, елһеҙ йомшаҡ тышҡа сығаһың.* Ғ. Сәләм.

**2.** Йылдам, етеҙ, тиҙ хәрәкәт иткән; *киреһе* һалмаҡ, яй. *Еңел аҙым. Еңел хәрәкәт. // Еңел атлау. Еңел йөрөү. Еңел ҡуҙғалыу.* ■ *Мурзин үҙенең баҫҡан ерҙә бейеп торған .. йондоҙ ҡашҡа аҡбәкәл туратының билендәге ҡашлы эйәренә еңел һикереп атланды.* Һ. Дәүләтшина. *Ул [Хужа] .. һиммәт кәүҙәһен тура тотоп атлай. Шаҡтай ҡалыная барһа ла еңел йөрөй.* Ә. Вәли. **Еңел һөйәкле** етеҙ хәрәкәтле, кәүҙәгә еңел. *Еңел һөйәкле инең һин, хәҙер ҡара: окшап ҡалдың ҡуҙғата алмаҫлыҡ умартаға.* М. Илбаев.

**3.** Үҙләштереүгә, аңлауға, башҡарыуға, үтәүгә ҡыйын түгел; анһат. *Еңел дәрес. Еңел тема. Еңел мәсьәлә. Еңел эш. Еңел булыу. Еңел юл эҙләү. // Еңел түгел. Еңел уҡыу. Еңел эшләү.* ■ *Был ауыр эш, кәрәкмәй тип [һөйгәнем] эҙләй һәр саҡ еңелде.* Ҡ. Даян. *[Сәйҙел:] Беләм, Зәйнәп, һиңә лә ауырҙыр, еңелме ни миңә?* Ғ. Сәләм. *Инсан улын алдалау анһат, еңел, сөнки ул бер ҡатлы һәм йомшаҡ күңел.* Ш. Бабич. *Унда барыу еңел түгел: илле ил, етмеш диңгеҙ кисергә кәрәк тигән Ертыңлар* (Әкиәттән). / Күңел асыуға тәғәйенләнгән. *Еңел көй. Еңел музыка.* /Күп көс түкмәй, анһат табылған. *Еңел уңыш. Еңел акса табыу. // Еңеү еңел генә килмәй. Уңышҡа еңел өлгәшеү.* / Ауырлыҡ килтермәгән, ыҙа сиктермәгән, борсоуһыҙ, мәшәҡәтһеҙ. *Еңел тормош. // Еңел күренеү. Еңел тойолоу. Еңел генә донъя көтөү.* ■ *Бына хәҙер бар суфыйҙар хәле шулай: еңел генә көн итеү ягын уйлай* (Мөнәжәттән). *Ҡурайҡайым еңел, көйө ауыр, еңел көнкәйҙәрҙе уйлайым* (Халыҡ йырынан). *Донъя ауырлығы еңел күренә арыҫландай сабыр ир булһа* (Халыҡ йырынан). / Етди түгел, өҫтән-мөҫтән генә булған; һай. *Еңел ҡараш. // Еңел уйлау.* ■ *[Шәкерт:] Уҡырға кәрәк. Ундай [өйләнеү тигән] еңел уй менән юҡҡа булышма, туған.* Т. Йәнәби.

**4.** Әҙ генә, йомшаҡ, һирәк (көсө, тәьҫире һ. б. буйынса). *Еңел генә томан төштө. Еңел генә ел иҫә. Еңел болоттарҙы ел осора.* / Тәьҫир көсө әҙ, һиҙелер-һиҙелмәҫ. *Тоҙо еңел. Аштың тоҙо еңел.* / Саҡ ҡына, беленер-беленмәҫ. *Еңел генә йылмайыу.* ■ *Фәйзуллин Сыртлановтың был оҙон телмәрен йылмайып тыңланы, һуңғы һүҙҙән һуң еңел генә көлөп һүҙгә ҡыҫылды.* С. Агиш. / Ҡурҡыныс тыуҙырмаған, ҡурҡыныс түгел, төҙәтеп була торған. *Еңел ауырыу. Еңел яра. // Еңел яраланыу.* ■ *Эс ауырыуы, еңел яра менән, минең кеүек контужин булып килгән һалдаттар яталар.* Д. Юлтый.

**5.** Ҡапыл ҡыҙып барыусан. *Еңел тәбиғәтле. Еңел кеше.* ■ *.. Мырҙаш тигән сауҙагәр кеше маҡтанһа кәпәреп, эреләнеп китә торған еңел тәбиғәтле, дыуамал кеше.* Д. Юлтый.

**6.** Хәрәкәте тиҙ, бер урындан икенсе урынға тиҙ күсә алған, ауыр ҡоралдар менән ҡоралланмаған. *Еңел артиллерия.*

♦ **Ауыр тупрағың еңел булһын** мәйетте ерләгәндә хушлашҡанда (йәки һуңынан иҫкә алғанда) әйтелә торған әҙәп һүҙе. *Атайым мәрхүм, ауыр тупрағы еңел булһын, «Ҡотһоҙ был урын, улым»,— ти торғайны тормошонан үртәнгән көндәрендә.* Ф. Иҫәнғолов. *Ауыр тупрағың еңел булһын инде атай! Вакытһыҙ киттең һиң, йәшләй киттең.* В. Исхаков. **Аяғы еңел** *йәки* **еңел аяҡлы**

бер кеше килгәс, эш, хәл ыңғайға, яҡшыға киткән саҡта әйтелә. *Һөйләнә-һөйләнә Хәҙисә апай килеп инде: Минең аяҡ еңел була торған, был йортта туй булмай ҡалмаҫ.* Ә. Бикчәнтәев. **Еңел атлетика** йүгереү, һикереү, йөҙөү һ. б. эсенә алған спорт төрө. **Еңел машина** аҙ һанлы пассажирҙар йөрөтә торған бәләкәй автомобиль. .. *Ҡаланан заводҡа, заводтан ҡалаға йөк ташыусы грузовиктар, еңел машиналар, автобустар һис туҡтауһыҙ ағылып торалар.* Х. Мохтар. **Еңел промышленность** киң ҡулланыу тауарҙарын эшләп сығара торған промышленность. **Ҡулы** (*йәки* **ҡул арты**) **еңел** билдәле бер кеше башлаған эш уңып, ыңғайға киткән саҡта әйтелә. *Зәйтүнә ҡыҙым техникум бөтөрөп, шул эшкә [алма ултыртыуға] тотондо инде. Ҡулы еңел тиҙәр, ултыртҡан ағаһы ерҙе яратып тамыр ебәрә.* Ш. Янбаев.

● *Толпарҙың уҙ тояғы үҙенә еңел.* Мәҡәл.

**ЕҢЕЛ-ЕЛБӘГӘЙ** *с.* Йоҡа, еңел (кейемгә ҡарата). *[Карт:] Ай-һай йонсоноң. Өҫ-башың да еңел-елбәгәй генә шул.* М. Тажи.

**ЕҢЕЛ-ЕЛПЕ** *с. һөйл.* **1.** Күп көс талап итмәгән, башҡарыуға анһат. *Һин, Мөхәмәт ағай, инде ологайып бараһың, колхоздың еңел-елпе эшендә генә эшләр ваҡытың еткән.* Ш. Янбаев.

**2.** Тәрән мәғәнәһеҙ, етди түгел. *Еңел-елпе таҡмаҡ. Еңел-елпе уй. Еңел-елпе шиғыр. // Вәғәҙәләр бирмә. Үттек инде еңел-елпе йәшәр осорҙо.* М. Кәрим. / Етди түгел, елбәҙәк, еңел. *Еңел-елпе холоҡ.* ■ *[Сәғит:] Алдымда элекке еңел-елпе Фәриҙә түгел, ә еткән ҡыҙ баҫып тора.* «Ағиҙел», 1965, № 4.

**ЕҢЕЛЕҮ** *ҡ.* **1.** *төш. ҡар.* **еңеү** [1] 1—3. *Кеше тарафынан еңелеү.*

**2.** Еңергә мөмкинлек биреү. *Кешенән еңелеү.* ■ *Көрәш һабаҡтарын тылҡый-тылҡый үҫкән батырҙар еңелмәҫтәр мәңге!* Ғ. Амантай. *Барсынһылыу еңелде, ти, Алпамышаға бирелде, ти.* «Алпамыша».

**ЕҢЕЛЛЕК** *и.* **1.** Ҡыйынлыҡһыҙ, еңел хәл. *Еңеллек биреү. Еңеллек эшләү.* ■ *— Беҙ зә хәлдән килгән кәҙәре юғарынан һиңә еңеллек һораған булыр инек.* Ғ. Дәүләтшин.

**2.** Тән һәм йән рәхәтлеге. *Тәндә еңеллек тойоу.* ■ *Айбулат тураһындағы уйҙар уға [Ләйләгә] еңеллек бирҙе.* Ғ. Ибраһимов. *Бер аҙҙан мин, тәнемдә еңеллек һиҙеп, күҙҙәремде иркен асып, ..ҡарап яттым.* С. Кулибай.

**ЕҢЕЛЛӘНЕҮ** *ҡ. һир. ҡар.* **еңеләйеү** 4, 5.

**ЕҢЕЛЛӘШЕҮ** *ҡ.* Еңелгә (3 мәғ.) әйләнеү (эш, тормош һ. б. ҡарата). *Эш еңеләште.*

**ЕҢЕЛЛӘШТЕРЕҮ** *ҡ.* Еңелгә, анһатҡа әйләндереү. *Тормошто еңелләштереү. Эште еңелләштереү.*

**ЕҢЕЛСӘ** *р.* Еңел (1—4 мәғ.) булған; еңелсән. *Еңелсә кейенеү. Еңелсә яраланыу.*

**ЕҢЕЛСӘН** *р. ҡар.* **еңелсә.** *Еңелсән йөрөү.*

**ЕҢЕЛТЕН** *р. диал.* Еңелсә. *Һәр бер кеше үҙе бер донъя ул, хөкөм итмә өҫтән еңелтен.* *Ҡ. Даян.*

**ЕҢЕЛҺЕҮ** *с.* Еңел ҡылыҡлы; елбәҙәк. *[Сафия:] Еңелһеү булаһың ҡыҙ саҡта, тойғоға таянып йәшәйһең гел.* Б. Бикбай.

**ЕҢЕЛӘЙЕҮ** *ҡ.* **1.** Күтәреү өсөн еңелгә әйләнеү, ауырлығы кәмеү. *Йөк еңеләйҙе.*

**2.** Башҡарыу, кисереү, үҙләштереү өсөн еңелгә әйләнеү. *Эш еңеләйә. Уҡыуҙар еңеләйҙе.* ■ *Ҡыйын эштәр еңеләйә, булһаң тырыш.* Ш. Бабич.

**3.** Ҡыйын, ауыр хәлдән еңелгә, анһатҡа әйләнеү. *Тормош еңеләйҙе. Хәл еңеләйҙе.* / Тәнгә, йәнгә еңеллек хисе килеү. *Баш еңеләйҙе. Тән еңеләйҙе.* ■ *Береһе менән уртаҡлашһаң, ҡайғы еңеләйеп киткәндәй була.* Б. Бикбай. *Сәғиҙәнең күңеле күтәрелеп, еңеләйеп киткәндәй булды.* М. Тажи.

**4.** Әҙ генә иҫереү, ҡыҙмаса булыу. *Еңеләйеп алғас, дуҫтар һүҙгә күсте.* Ә. Зәйнуллин.

**5.** Аҡылы кәмеү, еңел аҡыллыға әйләнеү. *Моғайын, аҡылға еңеләйеп сығып киткәндер ул [Мәүлиха].* Ш. Янбаев.

**6.** Ныҡ ауырыған кешенең үлер алдынан һауыҡҡан һымаҡ булып китеү. *Үлер алдынан ул еңеләйҙе, тороп ултырып ашап алды.*

**ЕҢЕЛӘЙТЕҮ** *ҡ.* **1.** Тартыу, һөйрәү өсөн еңелгә әйләндереү, ауырлыған кәметеү. *Тоҡто еңеләйтеү. Йөктө еңеләйтеү. Арбаны еңеләйтеү.*

**2.** Ҡыйын, ауыр хәлдән еңелгә әйләндереү. *Тормошто еңеләйтеү. Эште еңеләйтеү.* / Еңеллек хисе килтереү. *Сәй тәнде еңеләйтеп ебәрә.* ■ *..Ауырлыҡты йырҙар еңеләйтә, ҡыҫҡа итә оҙон юлдарҙы.* Н. Нәжми.

**ЕҢЕҮ** [1] *ҡ.* **1.** Һуғышта, яуҙа ҡаршы яҡты буйһонорға мәжбүр итеү, еңеүсе булып сығыу. *Дошманды еңеү. Һуғышта еңеү.* ■ *Бар миндә бына шул нәфрәт, бар миндә асыу көсө, шул нәфрәт менән дошманға ташланып еңә кеше.* Р. Ниғмәти.

**2.** Берәй төрлө ярышта, көрәштә өҫтөнлөк алыу, беренселеккә сығыу, уңыш ҡаҙаныу. *[Барсынһылыу:] Көрәштә еңеп дан алдың, батыр егет Алпамыша, йөрәгемә ут һалдың.* «Алпамыша». **Кем еңерҙән** үҙ-ара еңешеп. *Ике егет, ике шат гимназист, ..* кем *еңерҙән шахмат уйнаған.* М. Хәй. / Өҫтөнлөк алыу, уңыш яулау. *Беҙҙең илдә социализм еңде. Һис ҡайғырма, шатлан әүәлгесә, бәхет еңер әле, иншалла.* Ш. Бабич.

**3.** *күсм.* Тормоштағы төрлө хәлдәрҙе тырышлыҡ, ихтыяр көсө менән йырып сығыу, бирешмәү, сыҙау. *Ауырлыҡты еңеү. Ҡайғыны еңеү. Ҡаршылыҡты еңеү.* ■ *Был донъяның ауыр ҡайғыларын еңеп була бирҙәм булғанда* (Халыҡ йырынан). / Ниндәйҙер хәл, сифат өҫтөнлөк алыу, үҙ тәьҫиренә буйһондороу. *Әкиәт ҡыҙыҡ, ләкин йоҡо еңә, ... күҙҙәр йомола башлай.* Р. Солтангәрәев. / Ихтыяр менән баҫыу. *Теләкте еңеү. Хисте еңеү.* ■ *Бурлыҡ хисен, ахыры, еңә алмаған гөлдәй ҡыҙҙың ҡайнар хисе лә.* Ғ. Сәләм. *Йылҡыбай .. таң алдынан йоҡоһон еңә алмай йоҡлап китте, ти* (Әкиәттән).

● *Алйот еңдем тиер, аҡыллы көйҙым тиер.* Мәҡәл. *Еңгән еңелгәндең елкәһенә менгән.* Мәҡәл. *Кешене сир еңер, сирҙе аҙыҡ еңер.* Мәҡәл.

**ЕҢЕҮ** [2] *и.* **1.** Һуғышта, көрәштә, эш-хеҙмәттә яуланған уңыш. *Еңеү байрамы. Еңеү көнө. Еңеү йырҙары. Еңеү шатлығы. Еңеү хәбәре. Советтар Союзының Бөйөк Ватан һуғышындағы еңеүе. Ҙур еңеү яулау.* ■ *Мең туп утыҙ тапҡыр һауаны яңғыратты. Был беҙҙең бөйөк Еңеүҙең*

*кукрәүе ине.* Т. Кусимов. *Еңеү беҙҙең якта булыр. Ватан өсөн, фашист яуын тамам тар-мар иткәнгә тиклем алға, иптәштәр!* М. Тажи.

**2.** Хеҙмәт һ. б. өлкәлә нимәнелер тормошҡа ашырыу үтәү өсөн булған көрәштә яуланған уңыш. *Хеҙмәт еңеүе.* ■ *[Бригадир:] Еңеү башлана, иптәштәр еңеү! Беҙ байыл былтырғыға ҡарағанда ике тапҡыр [игенде] артыҡ сәстек ..* Б. Бикбай.

**ЕҢЕҮСЕ** *и.* Һуғышта, көрәштә, эш-хеҙмәттә һ. б. еңеп сыҡҡан кеше. *Еңеүсе ил булып күкрәп килә беҙҙең Совет иле.* Х. Ҡунаҡбай.

**ЕҢЕШЕҮ** *ҡ.* Һүҙеңде һүҙ итергә тырышып бәхәсләшеү; һүҙ көрәштереү. *Емеш һыр бирергә теләмәй: «Минең кулдәгем ситса түгел, ебәк кенә ул»,— тип еңешә.* З. Биишева.

**ЕҢЛЕ** *с.* Еңе булған, ең ҡуйып тегелгән. *Еңле күлдәк.*

**ЕҢМЕШ** *с.* Дөрөҫ булһа ла, булмаһа ла үҙ һүҙенән кире ҡайтмай талашыусан; үҙ һүҙле. *Еңмеш булыу.* ■ *Фәгилә өндәшмәҫерәк булһа ла, алдына алғанын ҡуймай торған еңмеш ҡыҙ ине.* Н. Мусин.

**ЕҢМЕШЛӘНЕҮ** *ҡ.* Дөрөҫ булһаң да, булмаһаң да еңергә, үҙеңдекен итергә тырышып тартышыу. *[Фәләү:] Теге үҙ һүҙле, үгеҙ күҙле Харис бар ине бит, шуның еңмеш ҡыҙы .. еңмешләнә торғас, бөтәһен дә еңеп бөткән.* И. Ғиззәтуллин.

**ЕҢМЕШӘК** *с. диал.* Еңмеш.

**ЕҢСӘ** [1] *и.* **1.** Берәр эш (ураҡ урыу һ. б.) эшләгәндә беләк осона терһәк тиңенән кейә торған айырым ең. *[Айбулат менән Гөлйөҙөм] еңсәләрен тиҙ генә кейә һалып, ашығып урырға кереште.* Һ. Дәүләтшина. *[Ҡыҙҙар эшләй] күлдарына аппаҡ еңсә кейеп, яулыҡтарын бәйләп ҡыйыҡ.* Ғ. Мәсғүт.

**2.** Төрлө машинаның еңгә оҡшатып ҡуйылған өлөшө. *Бункер еңсәһе аҫтына бер-бер артлы машиналар килеп туҡтай.* «Совет Башҡортостаны», 1968, 2 август.

**ЕҢСӘ** [2] *и.* **1.** *анат.* Ҡатын-ҡыҙ енес ағзаһының эскә ингән юлы. *Еңсә ҡыҙҙарҙа ҡыҙлыҡ ярыһы менән ябылған була.*

**2.** *бот.* Ҡайһы бер үҫемлек япрағының һуҡта ураҡкан өлөшө.

**3.** *мед.* Тарамышты, ҡайһы бер тамыр, нервыны уратып алған көпшә. *Нервы еңсәһе. Ҡорһаҡтың тура мускул еңсәһе. Һеңер еңсәһе.*

**4.** *бот.* Сәскә инәлегенең емшәнгә төшкән юлы.

**ЕҢҺЕҘ** *с.* Еңе булмаған, ең ҡуйылмайынса тегелгән. *Еңһеҙ кейем. Еңһеҙ тегеү.*

**ЕҢҺӘҮ** *и. диал. ҡар.* **еңсә** [1] 1.

**ЕҢӘРЕМ: еңәремгә сығыу** *диал.* еңмешләнеү.

**ЕҢӘРМӘН** *с. диал.* Еңмеш.

**ЕҢ-ЯҒА** *и. йыйн.* Кейемдең ең һәм яғаһы. *Күлдәктең ең-яғаһы керләнгән.*

♦ **Ең-яға килешеү** (*йәки* **килеү**) елкәнән алып, ныҡ һуғышыу. *Батрактар менән ең-яға килешкәне зилскийҙың күңеленән сыҡманы.* Ғ. Дәүләтшин.

**ЕП** [1] *и.* **1.** Тегеү өсөн тәғәйенләп мамыҡ, ебәк сүсенән иләнгән бик нәҙек бәй, бау. *Нәҙек еп. Йыуан еп. Бер һаплам еп. Капрон еп. Киндер еп. Сираткан еп. Сүреле еп. Еп йомғағы. Еп сүреһе. Еп иләү. Еп сиратыу. Еп урау. Еп шөйтөләү.* ■ *Ул [Исхаҡ] энәгә үткәреп, ебен тешләп өҙҙө лә һеңлеһенә бирҙе.* Һ. Дәүләтшина. *Яғаларын, еңдәрен, итәктәрен нәгешләп, һеҙгә берәр күлдәк тектек .. Беҙ уларҙың һәр бер нәгешенә айырым күңел һалдыҡ, ептәрен, төҫтәрен, биҙәктәрен һайланыҡ.* Д. Юлтый. **Арҡау ебе** *ҡар.* **арҡаулыҡ. Аяҡлы еп** терһәккә йәки тубыҡҡа урап һалынған еп. **Баҫма[лы] еп** ун әйтемдән (30—40 бөртөктән) тороп, терһәккә йәки тубыҡҡа уралған еп. *Әсәһе [Нәфисәгә] бер баҫма еп менән ике бишәр тинлек баҡыр аҡса бирҙе.* И. Көсәпҡол. **Буй еп** *ҡар.* **буйлыҡ** 1. **Еп бешереү** буйлыҡ епте һелтеле һыуҙа ҡайнатыу. **Көрөҫ ебе** *ҡар.* **көрөҫ. Көлтә еп** һуғып бөткәс, буйлыҡтың осонан ҡырҡып алынған еп. **Салымлы еп** *ҡар.* **аяҡлы еп. Сей еп** йыуылмаған, бешерелмәгән тегәр еп. **Тегәр еп** тегенеү өсөн ҡулдан иләнгән киндер еп. **Ул ебе, ҡыҙ ебе** *этн.* бәпес туйында әбей-һәбейгә таратып бирелә торған аяҡлы еп. **Һаплам еп** энәгә һапланған еп. *Әсәйемдең .. күлдәк иҙеүендәге һаплам епле энәһе һәр ваҡыт әҙер генә була ине.* Ш. Янбаев. **Шәкәр ебе** аҡ еп.

**2.** Бәйләү, ниҙер тағыу өсөн тәғәйенләнгән нәҙек бау; бәй. *Ҡармаҡ ебе. Быҙау муйынына еп тағыу. Еп [менән] бәйләү.* ■ *Ҡамыр батыр алтын башаҡлы, ҡыҙыл ҡауырһынлы, көмөш кеҙеле уғын епкә бәйләп, келәт өрлөгөнә аҫҡан* (Әкиәттән). **Ана еп** һабандың баш ебе (элек селектән булған); һабан сынйыры. **Баш ебе** 1) баҫыраузың башын әләктерә торған тоҡанлы бау; 2) кирәгәнең өҫ яғынан тирмәне әйләндереп тарттырып бәйләгән бау; 3) киндер һуға башлағанда тәүге арҡау урынына атып киткән сепрәк.

**3.** *күсм.* Ниҙелер беректергән бәйләнеш. *Дуҫлыҡ ептәре. Туғанлыҡ ебе. Һүҙ ебе. Фекер ебе. Хыял ебе.*

♦ **Бер епкә теҙеү** бер төрлө тип, бер итеп ҡарау. *[Зөбәйҙә:] Һеҙ бисәләрҙең бөтәһен дә бер епкә теҙергә ашыҡмағыҙ әле, Ғәйфи Ғәҙелич.* Ғ. Әхмәтшин. **Еп кеүек өҙөлөү** әрнеү, һыҙлау (йөрәккә ҡарата). *Һин булмаһаң, алдым томанлана, йөрәкәйем өҙөлә еп кеүек.* А. Игебаев. **Епкә теҙгән кеүек** тигеҙ генә рәткә теҙелгән. *Күрегеҙсе, епкә теҙгән кеүек ҡаңғылдашып улар осалар.* Ғ. Мәсғүт. **Еп осо** аяҡ кейеме теккән ептең осона энә урынына ишеп ҡуйған шырт. **Еп өҙөрлөк [тә] хәл ҡалмау** бөтөнләй хәлдән тайыу. *Ерҙең буйынан буйына һыулы биҙрә күтәреп йөрөп Фәриҙәнең еп өҙөрлөк тә хәле ҡалманы.* Ф. Әсәнов. **Муйынға еп һалыу** ныҡ ирекһеҙләү. **Энәһенән-ебенә тиклем** бөтә ваҡ ентегенә тиклем. Энәһенән-ебенә тиклем һорашыу. ■ *Иң элек вывесканың яҙыуын энәһенән-ебенә тиклем уҡып сыҡтым.* С. Агиш.

**ЕП** [2] *киҫ.* Е өнө менән башланған сифат һәм рәүешкә ҡушылып, артыҡлыҡ дәрәжәһен бирә. *Еп-еңел. Еп-еүеш.*

**ЕПА́РХИЯ** [*рус.* ⟨ *гр*]. *и.* Епископ ҡул аҫтындағы административ сиркәү округы.

**ЕПИ́СКОП** [*рус.* ⟨ *гр.*] *и.* Христиан диненең юғары рухани дәрәжәһе һәм шул дәрәжәләге кеше.

**ЕП-ЙЫШЫУ** *и. йыйн. һөйл.* Ишелгән төрлө бау. *[Бөрйән халҡы] еп-йышыу ишеп, көрәк са-*

*быт, тугын бөгөп, дегет кайнатып ала ла, ..иген-ле яктарга сәфәр сыга ине.* С. Ғәбиҙуллин.

**ЕПКЕРТЕҮ** *к. диал.* Екһетеү.

**ЕПЛӘҮ** *к.* Еп (2 мәғ.) менән бәйләү, епкә тағыу. *Ҡармаҡты epлəy.* ■ *Ҡармаҡты әрәм итәһең! ..Аждаһалай балыкка кеше блесна ырғытамы? Икенсе блесланы шпагат менән епләргә кәрәк.* Д. Бураҡаев.

**ЕПСӘ** *и. биол.* Тән туҡымаһын тоташтырған оҙонса күҙәнәк. *Тоташтырғыс епсәләр.*

**ЕПҺӘ** *и.* **1.** Бер нисә ағасты, таҡтаны йыйып тоташтырған арҡыры шына йәки сөй. *Ишектең епһәһе. Бураның епһәһе.*

**2.** *тук.* Һоҫа эсендәге сүрене кейҙерә торған үҙәк; һоҫа энәһе.

**ЕПҺӘҮ** *к. диал.* Төпсөү. *Епһәп һорашыу.*

**ЕПШЕК** *с.* Йылыға бер аҙ йомшаған, еүешләнгән. *Епшек ҡар. Епшек буран. Көн епшек. Епшек булыу.* ■ *.. Марттың епшек буранында ҡышҡы эҙҙәр ҡалды күмелеп..* Ғ. Рамазанов.

**ЕПШЕКЛӘНЕҮ** *к.* Епшеккә әйләнеү. *Ҡояш йылытҡанлыҡтан, көн тағы ла йомшара төштө. Ҡар ҙа епшекләнә башланы.* Б. Хәсән.

**ЕПШЕЛТӘК** *с. диал.* Епшек.

**ЕПШЕТЕҮ** *к.* **1.** Йылытып, йомшатыу, еүешләндереү. *Йылы ел ҡарҙы епшетте.*

**2.** *эйһ. ф. ҡар.* **епшеү** [1]. *Көн бик ныҡ епшетеп, юлдар тамам ҡарайҙы.* Х. Мохтар.

**ЕПШЕҮ** [1] *к.* Йылыға бер аҙ йомшау, еүешләнәү (ҡарға ҡарата); епшеккә әйләнеү. *Ҡыҫҡа табан көн һыуытты. Көндөҙ лыҫҡылдап, епшеп ятҡан юл боҙға әйләнде.* Я. Хамматов.

**ЕПШЕҮ** [2] *с.* Йылыға йомшап, бер аҙ еүешләнгән (ҡарға ҡарата). / Ҡары иреп, бер аҙ еүешләнгән (көнгә ҡарата). *Көн епшеү. Март башында ямғыр яуғандан бирле туңдырмай.* «Ағиҙел», 1971, № 3.

**ЕПШӘН** *с. диал.* Епшек.

**ЕР** *и.* **1.** *(баш хәреф менән)* Ҡояш системаһындағы өсөнсө торған, кеше йәшәгән планета. *Ер шары. Ер әйләнәһе. Ер йөҙө. Ай Ерҙең юлдашы. Ер үҙ күсәрендә һәм Ҡояш тирәләй әйләнә. Ерҙән Ҡояшҡа тиклемге ара 150 миллионға яҡын саҡрым.* ■ *Орбитаны урап Ер гел йөрөр, кис булдырып һәм таң аттырып.* Р. Ниғмәти. **Ер юлдашы** орбита буйлап Ер тирәһендә әйләнә торған хәрәкәт итеүсе космос аппараты. *Беҙ осорҙоҡ күккә Ер юлдашы планеталар серен белергә.* Б. Вәлит. / Тәбиғәт тереклек иткән, кеше йәшәгән урын. *Ерҙә йәшәү.* ■ *Зөләйха, һин ерҙә йөрөгән хур ҡыҙы, күҙҙәреңдә яна күктең йондоҙо.* Салауат Юлаев. *Был ерҙә юҡ, теге донъялалыр, тип ысын бәхетте өмөтһөҙләнә башлай ул [күңел].* М. Ғафури. *Ул йондоҙҙар яна шунда [йыһанда] һоҡландырып ерҙе, күкте.* М. Кәрим. *Ерҙе йоҡонан уятҡан, илде эшкә күҙғатҡан, .. ҙур ҡояшлы таң ине.* Р. Ниғмәти. **Ер ҡабығы** *геол.* ер шарының тикшереп була торған ҡаты тышҡы ҡатламы. *Ҡайһы бер урында ер ҡабығы сатнай һәм уның ярыҡтарынан шыйыҡ магма ағып сыға.* М. Моталов. **Ер ҡатламы** ерҙең геологик төҙөлөшөн тәшкил иткән ҡат-ҡат булып ятҡан өлөштәре; ҡатлау. *Башҡортостанда ер ҡатламының ҡалынлығы 40—48 километрға етә.* К. Тимергазин. **Ер тетрәү** *геол.* ер эсендә барған төрлө процестар, вулкандар һ.б. сәбәптәр арҡаһында барлыҡҡа килгән ер аҫты һелкенеүҙәре һәм ер ҡабығы тирбәлеүе. *..ҡатламдағы физик, химик һәм механик процестар арҡаһында ер тетрәү, тауҙар яһалыу, вулкандар урғылыу күренештәре хасил була.* Д. Бураҡаев.

**2.** Ҡоро урын, материк (океан, һыу һәм һауа киңлектәренә ҡаршы ҡуйып әйтелә). *Ергә сығыу. Кәмәнең мороно ергә төртөлдө. Пароход диңгеҙ уртаһына етте, ер күренмәй башланы.* ■ *Башҡортостан бөтә ҡоро ерҙең меңдән бер өлөшөн алып тора.* М. Хисмәтов.

**3.** Шул планетаның өҫкө һәм тәрәндәге ҡаты ҡатламы. *Ер өҫтө. Ер аҫты. Ер убылыу.* ■ *Ҡапыл ер һелкенде, өҫкә тупраҡтар ҡойолдо.* Д. Юлтый. **Ер аҫты һыуҙары** тау тоҡомдарының өҫкө ҡатынан үҫемлек һәм тереклектәрҙең эшмәкәрлеге арҡаһында яһалған ер ҡатламында була торған һыу. *Ер аҫты һыуҙары бәреп сығыу.* ■ *Ер ҡатламындағы иреүсән матдәләрҙе ер аҫты һыуҙары иретеп ағыҙалар.* М. Вәлиев. / Ер шарының өҫкө майҙаны, тереклек бара торған ҡатлауы; тупраҡ. *Туң ер. Ҡаты ер. Ер аҫты. Ер йәшәреү. Ер кибеү. Ер бауырлап осоу. Ер һөрөү. Ер ҡаҙыу. Ер соҡоу. Ергә тамыу. Ергә ҡойолоу. Ергә һалыу. Ергә күмеү. Ергә ултырыу. Ерҙән ҡутәрелеп осоп китеү.* ■ *Әле күптән түгел генә ҡалып ҡар аҫтында баҫылып ятҡан ер ҙә уянды.* М. Тажи. *Яҙ етер бер, боҙ китер, ер асылып, ер өҫтөнә үлән сығыр.* Ш. Бабич. *Ер кеше ҡулдарының хеҙмәтенә һәм үҙенең дошманы булған эрозиянан яҡлауға мохтаж.* А. Тайчинов. *Ялан яғы .., уның хатта еренең төҫө лә башҡаса. Аҡһыл-һары. Көл төҫлө. Эйек буйында ер ҡара һағыҙ кеүек сөм ҡара бит!* З. Биишева. *Өсөнсө ай инде ямғырҙар юҡ, иҫә афәт еле. Ерем көйә.* М. Кәрим.

**4.** Шул майҙандың үҙенә бер хас үҙенсәлек менән айырылып торған урыны. *Таҡыр ер. Тигеҙ ер. Уйпат ер. Уйһыу ер. Ялан ер. Батҡаҡ ер. Йылғаның тар ере. Тауҙың текә ере.* ■ *Тау ерендә йылан күп була, .. абайла [тине әбей].* М. Тажи. *Уйһыу ғына ерҙән болан килә, әй түтә тип, Зөлхизә* (Халыҡ йырынан). *Уйпат-уйпат, уйпат ерҙә бейә һауа киленсәк* (Халыҡ йырынан). **Ер асылыу** яҙ көнө ҡар иреп, ҡара ер күренә башлау. *Ер асылыу менән күк үлән күренә башлай.* **Ер иҙән** бер нәмә (таҡта, таш, цемент һ. б.) һалынмаған тупраҡ иҙән. *Ҡарындыҡ тәҙрәле, ер иҙәнле ситән өйҙә ялананаҡ .. һикерәп-һикереп уйнауымды әле лә онотмайым.* Т. Йәнәби. **Ер ҡыртышы** ерҙең иң өҫкө ҡатламы, ҡабығы (яҡынса 30—40 см.). *Ер ҡыртышын аҡтарыу.* **Ер ҡыртышлау** ерҙең ҡыртышын аҡтарыу, емереү. *Дошмандың ауыҙ-мороно ҡанда булыр .. ер ҡыртышлап, вата-емерә бара булыр.* Р. Ниғмәти. **Ер өй** ергә ҡаҙып яһалған, ерҙән әҙерәк ҡалҡып сығып торған тупраҡ кәҫтәрҙән яһалған өй; землянка. *Ер өйҙә йәшәү. Ер өй яһау.* ■ *Бына шулай .. ҙур байлыҡҡа ирешеп, шәп итеп йәшәп ятҡанда .. теге саҡта ташлап киткән ер өйө Ирйегеттең иҫенә төшкән.* З. Биишева. **Ҡара ер** 1) яҙ еткәс, ҡары иреп асылған ер. *Ҡара ер асылыу. Ҡара ергә аяҡ баҫыу.*

■ *Күп кенә колхоздарҙа бесән бөттө. Малды нисек ҡара ергә баҫтырырбыҙ инде.* Я. Хамматов. *Хәҙер юлдың күп кенә урындарында ҡар иреп бөткән, ҡара ер асылған.* Ғ. Ибраһимов; 2) *күсм.* ҡәбер. *Ҡара ер аҫтында ятыу. Ҡара ергә инеү.* ■ *Ғүмер буйы рәхәт күрмәй, инермен мин ҡара ергә.* М. Ғафури.

**5.** Хужалыҡ мәнфәғәттәрендә ҡулланылған, эшкәртелә, ашлыҡ сәселә һ.б. файҙаланыла торған майҙан; ер-һыу (урман, ҡыр һ. б.). *Колхоз ере. Совхоз ере. Крәҫтиән ере. Помещик ере. Көтөү ере. Сәсеү ере. Ер биләү. Ер бүлеү. Ерҙе дәүләтләштереү. Сиҙәм һәм ҡалдау ерҙәрҙе үҙләштереү. Бөйөк Октябрь социалистик революцияһы һөҙөмтәһендә бөтә ер дәүләт ҡулына күсте.* ■ *Бар ине беҙҙең ерҙәрҙә һунарҙың шәп замандары. Хәҙер урман да йылдан йыл һирәгәйә, йәнлектәр, ҡоштар ҙа кәмеп бара.* М. Тажи. *[Һалдаттар:] .. һуғыш та, мир ҙа беҙҙең өсөн түгел. Уларҙың барыһы ла генералдар, байҙар өсөн .. Беҙҙең бер табан еребеҙ юҡ.* Д. Юлтый. / Иген һ. б. ашлыҡ үҫтерелә торған сәсеүлек майҙаны; баҫыу. *Иҫкергән ер. Пар ере. Ер ашлау. Ер һуғарыу. Ер эшкәртеү. Игенселәр ерҙең өлгөргәнен көтә.* ■ *Ер оҙон, бер башынан бер башы әллә ҡайҙа ята. Аяғың ғына түҙһен.* Р. Низамов. / Баҫыуҙың билдәле бер үҫемлек үҫә торған өлөшө. *Арыш ере. Баҡса ере. Сөгөлдөр ере.* ■ *Бригадир кәбән ҡойҙораһы урынға уны [Зияны] картуф еренә ебәрә.* М. Тажи. **Ер башы** баҫыуҙың сиге, ыҙаны. *Пар еренең ауыл осона яҡынлағанда ер башында Йәмбикә баҫып тора ине.* Ф. Исәнғолов. *Ер башына килеп баҫҡанымда таралғайны төндөң эңере.* М. Кәрим. **Яңы ер** сиҙәмде һөрөп, бер йыл тары, икенсе йылына бойҙай сәселгән ер. **Серек ер** сиҙәм асылып, өс мәртәбә, йә унан артыҡ сәселгән ер. *Серек ергә төрлө ашлыҡ сәсәләр.* **Надел ер** *тар.* революцияға ҡәҙәр крәҫтиән ғаиләһенә файҙаланыу өсөн бүлеп бирелгән ер биләмәһе. *Элекке Өфө губернаһында крәҫтиәндәрҙең община менән файҙаланған надел ерҙәре миллион 807 мең дисәтинә .. булған.* «Совет Башҡортостанының ун йылы», 1929. **Ер рентаһы** *тар.* антогонистик йәмғиәттә ерҙе эшкәртеүселәр хеҙмәтен эксплуатациялау нигеҙендә барлыҡҡа килгән һәм ер биләүсе файҙаһына китә торған өҫтәмә продукт, өҫтәмә табыш. **Ер реформаһы** ер биләүгә һәм ер менән файҙаланыуға ҡағылышлы реформа. **Ер төҙөү** ерҙе файҙаланыуҙы тәртипкә һалыу буйынса дәүләт сараларының теҙмәһе. **Ер төҙөүсе** ерҙе файҙаланыуҙы тәртипкә һалыу буйынса белгес; ер төҙөү белгесе. **Ер төпләү** ерҙе иген баҫыуына, баҡсаға һ. б. әйләндереү өсөн шул урындағы ағас, ҡыуаҡтарҙы тамырынан ҡуптарып таҙартыу. *Ер төпләп баҡса яһау.*

**6.** Халыҡтың үҙ төйәге; ил. *Ят ер. Сит ер.* ■ *Арыҫландар үҙ ерен залимдарҙан таптатмаҫ.* Ш. Бабич. *Ул [ел] миңә хәбәр килтерә тыуған-үҫкән еремдән, өҙөлөп һөйгән илемдән.* Салауат Юлаев. / Халыҡ йәшәгән билдәле бер урын; административ территория *Ауыл ере. Ҡала ере.* ■ *Ауыл ерендә шул инде ул, ситтән килгән кеше бойҙай араһындағы һерәйеп ултырған һоло һымаҡ күҙгә бәрелеп кенә бара.* М. Тажи.

**7.** Әйберҙең, нәмәнең ниндәй ҙә булһа бер өлөшө, киҫәге, урыны; төш. *Ҡаланың матур ере. Йылғаның тар ере. Кейемдең туҙған ере. Тәҙрәнең ватылған ере.* ■ *Кеше түгел сыбыҡты ла тотҡан еренән һындырып булмай. Баланы дөрөҫ юлға төшөрөү, уға дөрөҫ йүнәлеш биреү — әнә менән ҡойо ҡаҙыу ул.* М. Тажи. *Бергәләшеп, .. өҫтағанды киң һикенең урта бер ренәрәк корҙолар ҙа .. йоклап киттеләр.* Т. Йәнәби. *Канау эсе түбыҡтан һыу .., ҡайһы ере тәрән, ҡайһы ере һай.* Д. Юлтый. / Кеше тәненең бер өлөшө. *Ауыртҡан ер. Һынған ер. Табандың өйкәлгән ере. Баланың ҡайһылыр ере өләсәһенә тартҡан.* ■ *Вагондан рельсҡа йығылып төшкәйнем. Уң аяҡтың енсегенә тура килде. Ул ныҡ ауырта торған ер икән: һындарым китеп яттым.* Д. Юлтый. *Артабан ҡайһы ерҙәре һыуланғандыр, бер сирҡаныс алғас, Ҡасимға һиҙелмәне.* Н. Мусин.— *Ҡараңғыҙмы, бер ере лә имгәнмәгәнме?..* Э. Чаныш.

**8.** Нимәлер була торған, нимәлер эшләнә торған билдәле бер майҙан, урын. *Уйнай торған ер. Осраша торған ер. Һыу ала торған ер. Мал ҡуя торған ер. Тиреҫ түккән ер. Ҡыуыш ҡорған ер. Бесән ята торған ер. Ҡайтыр ер. Ятыр ер. Ултырыр ер.* ■ *Ат эсерә торған ергә барып, һалҡын һыу менән бик шәпләп йыуындым. .. Бөтөнләй хәл инеп китте.* С. Агиш. *Хатта аҡсарлаҡтарҙың да ҡайтыр ере, һағынып, яратып көтөп торған балалары бар.* З. Биишева. / Нимәгәлер тәғәйенләнгән, ниндәйҙер эшмәкәрлек итә торған ойошма, урын. *Уҡыған ер. Эшләгән ер. Хеҙмәт иткән ере һәйбәт. Уҡытҡан еренән алып, икенсе эшкә күсергәндәр. Эшләгән ерен маҡтап бөтә алмай.* / Әҙәби, музыкаль әҫәрҙең һ.б. берәй киҫәге, урыны. *Хәбәр ҡыҙыҡ ерендә өҙөлдө. Йырҙың һуҙып йырлай торған ере. Романдың ҡыҙыҡ ерҙәре күп.* ■ *[Газета эшселәре] мин уҡырға тейеш булған ерҙе бармаҡ менән төртөп күрһәттеләр.* С. Агиш.

**9.** Ара, араўыҡ (ғәҙәттә алыҫлыҡ берәмектәре менән ҡулланыла). *Бер аҙ ер. Араўыҡ ер. Байтаҡ ер. Биш саҡрым ер. Өс аҙым ер. Квартал самаһы ер киткәс. Бер аҙ ер үткәс.* ■ *Төн булһа, артиллерия утына ҡарамаҫтан .. ярты саҡрымлап ергә һыуға барабыҙ.* Д. Юлтый. *[Беҙ] иптәшем менән кәмәлә байтаҡ ер аҡҡайныҡ инде.* Т. Йәнәби. **Ел етмәҫ ер** *шул уҡ* **ҡоштар осоп етмәҫ ер** (*ҡар.* **ҡош**). *Ел ерәнем егетеңде еткер ел етмәҫ ергә.* Н. Иҙелбай. *Ҡоштар осоп етмәҫ ерҙә .. күгәреп ятҡан бик ҙур диңгеҙҙәр бар.* Б. Ишемғол. **Күҙ күреме ер** күҙ күрә алған араўыҡ. **Ҡул һуҙымы ер** яҡын ара. *Әлшәй районының үҙәге Раевканан Ҡармышҡа ҡул һуҙымы ер.* Ш. Насыров. **Таяҡ ташлам ер** яҡын ғына ара. *Баҡый ауылынан сығып, таяҡ ташламы ер китмәне, тауға үрелде.* Ж. Кейекбаев.

**10.** *күсм. һөйл.* Кәрәклек, хәжәт булыу. *Берәр ергә яраў. Етмәгән еренә үҙем бирермен.*

**11.** *күсм.* Мөмкинлек, берәй нәмәнең булыу, башҡарылыу ихтималы; хәл. *Түҙер ер ҡалманы. Табыр ерем юҡ.*

**12.** *у-в, клш* **ерҙә** Тапҡыр, мәртәбә (һандарҙы

ҡабатлағанда ҡулланыла). *Дүрт ерҙә бишең — егерме.*

**13.** *сыгн. клш* аффиксы менән бәйләүес функцияһында ҡулланыла (*ҡар.* **ерҙән, еренән**).

♦ **Ауыртҡан ер** *ҡар.* **ауыртыу.** *Яңы бригадир Буранбайҙың ауыртҡан еренә төрттөрҙө.* И. Ғиззәтуллин. **Бер ерең дә кәмемәҫ** *йәки* **бер ерем дә кәмегәне юҡ** бер нәмә лә булмаҫ. *Мин ялҡау түгел, әҙерәк шаталаҡлығым бар. Шуның өсөн мине ауылда „шаталаҡ Ямал" тип йөрөтәләр. Әйҙә әйтһендәр, унан бер ерем дә кәмегәне юҡ әле.* М. Тажи. **Биле ер күрмәгән** *ҡар.* **бил.** **Ер аҫтында йылан көйшәгәнен ишетә** артыҡ күп хәбәр белгән кеше тураһында шелтәләп әйтелә. *[Булат:] Бына һиңә Рахмай. Ул ер аҫтында йылан көйшәгәнен дә ишетә. .. Ҡасан Ҡарыя тураһындағы хәбәрҙе белеп алған.* К. Кинйәбулатова. **Ер аяғы — ер башы** бик алыҫ. *Ер аяғы — ер башы ерҙән килеү.* ■ *Йәйәүләп ер аяғы — ер башы оҙам юл килеүгә уның [егеттең] аяҡтары талыҡҡан, үҙе әбеккән, һамҫыған, билгау аҫты ла бәләкәс бушаған.* Ж. Кейекбаев. **Ер балаһы** (*йәки* **улы**) Ер планетаһы кешеһе; кеше. *Күкте гиҙгән Ер улына ғашиҡ булған Ай ҡыҙы.* Ҡ. Даян. **Ер бауырлау** түше менән ергә тейер-теймәҫ елеү, осоу. *Ер бауырлап сапҡан ат.* ■ *Ә Илмырҙа атына ҡамсы тартып, ер бауырлап елә .. ҡайҙалыр.* М. Тажи. *Ялан ғына ерҙе бауырлап осҡан муйыны ала ҡара ҡарлуғас* (Халыҡ йырынан). **Ер бауыры** ер өҫтө. *Тарих көслө .. көрәш майҙанында тормош өсөн ер бауырын ҡандан йыуҙырған.* Т. Йәнәби. **Ер бауыры һалҡын** үлгән кеше бара-бара онотола, иҫән кешене онотоуы ауыр тигән мәғәнәлә ҡулланыла. **Ер бит** ояты юҡ, намыҫһыҙ, оялыуҙы белмәгән. *[Гөлбикә:] Рәхмәт әйтәһе урынға битеңә төкөрөп сығып китһен әле, ер бит.* Н. Асанбаев. **Ер бөрсәһе** япраҡ кимереүселәр ғаиләһенә ҡараған һикереп йөрөй торған бәләкәс кенә төрлө ҡороҡтос бөжәк. **Ер буйы** *иҫк.* буйы 80 сажинға (һәр сажин 2,134 м.) тигеҙ булған оҙонлоҡ үлсәү берәмеге. *Бер ер буйы киткәс. Ер буйындай барыу.* ■ *Бында аҙым һайын хикмәтле нәмәләр күреп тораһың. Бер ер буйы ла китә алмағанмындыр, ниҙәр генә күреп бөтмәнем.* Ә. Вәли. *[Юламан] ҡыңғырлай-ҡыңғырлай беҙҙән ер буйы ҡалышып, арттан әйәреп килде.* Ф. Иҫәнғолов. **Ер булыр** (*йәки* **булһын**) *ҡарғ.* үлһен, юҡ булһын. **Ергә ҡайтыу** үлеү. *[Ҡормой:] Беҙгә .. күптән ергә ҡайтаһы ине лә бит, ваҡыт етмәй.* Б. Бикбай. **Ергә һалмау** кире ҡаҡмау, ҡабул итеү, иҫәпләшеү (һүҙ, кәңәш һ. б. тураһында). *Һүҙемде ергә һалмағыҙ, тыңлағыҙ. Кәңәшемде һалма, тот.* **Ергә һалыу** иҫәпләшмәү, бар тип тә белмәү, инҡар итеү (һүҙҙе, кәңәште, йоланы һ.б.) *Ил йолаһын ергә һалырға ярамай.* **Ерҙә ятып ҡалыу** бойомға ашмау, юҡ булыу, онотолоу (теләк, уй, ниәт һ.б. тураһында). *Бының ише генә өмөттәре ергә ятып ҡалғанмы ни уның, Юламандың.* З. Биишева. *Исеме ерҙә ятып ҡалмаһын тип, балаға үлгән туғандарының исемен ҡушыу йолаһы бар.* Т. Кусимова. *Яҡшылыҡ ерҙә ятып ҡалмай ул ҡыҙым.* М. Тажи. **Ер емереп** ҙур дәрт менән, ихлас тырышып, шәп итеп. *Беҙҙең матур мимылдыҡ бер яңғыҙы булһа ла, ер емереп эшләгәс, артыҡ булды әрҙәнә.* Ғ. Мәсғүт. **Ер емертеп йөрөү** дәрт, күтәренке күңел менән шау-гөр килеп йөрөү. *Парижды лә алдыҡ беҙ. Французҙарҙы еңгәндә ер емертеп йөрөнөк беҙ* (Халыҡ йырынан). **Еренә еткереп** 1) яҡшы, һәйбәт сифатлы, тулы итеп. *Еренә еткереп эшләү.* ■ *Һәр нәмәне йыбанмай, еренә еткереп эшләй ул Баймөрат.* Н. Мусин; 2) ентекләп, аңлайышлы, асыҡ итеп. *Еренә еткереп һөйләү.* **Еренә еткереү** тейешенсә итеп башҡарыу, тулыһынса үтәү. *Ҡарарҙы еренә еткереү.* ■ *Бер нисә взводҡа Андреев тураһында булған хөкөмдө еренә еткереү, атыу өсөн приказ булһа ла улар үтәмәнеләр, баш тарттылар.* Д. Юлтый. *Дәүләт һәм йәмғәт ойошмалары, вазифалы кешеләр СССР Конституцияһын, РСФСР Конституцияһын, Башҡорт АССР-ы Конституцияһын, һәм совет закондарын еренә еткереп үтәргә тейеш.* Башҡорт АССР-ының Конституцияһы, 1984. **Ер итеү** ҡоллоҡҡа төшөрөү, хур итеү. *— Алтмыштағы атаңды ҡол итмәһендәр тиһәң, билгенәһен бөкрәйтеп, күҙгенәһен секрәйтеп, тарамышын тарттырып, тибеп һынын ҡатырып, ер итмәһендәр тиһәң,— үлтер, улым, фашисты!* Р. Ниғмәти. **Ер йотоу** (*йәки* **убыу**) 1) дини хөрәфәт буйынса, ҡылған гөнаһың өсөн ер убылып ер аҫтына төшөп китеп үлеү. *Мине хаҡлы түгел тиһәң, үҙеңде ер йотор,— тип башта әйтеп бөтмәгән һүҙен дауам итте ҡатын.* Х. Зарипов; 2) нимәлер ҡапыл эҙһеҙ юғалыу, юҡ булыу. *[Хәйруш:] Әллә үҙен [Сәлимде] ер йотто инде, һис бер ерҙән табып булмай. Яңы ғына ошо тирәгә килгән кеүек ине.* Х. Ибраһимов; 3) әрләү, ләғнәтләү һүҙе. *Ер упҡыры. Ер йотҡор. Ер йотһон.* ■ *Күпме барма, сикһеҙ кеүек һуғыш ҡыры: О ни булды?! Шул минутта бөтәһен дә ер упҡыры!* Н. Нәжми; 4) ант итеү, ышандырыу һүҙе. *Ер йотһон. Ер упһын!* ■ *Үҙ күҙем менән күрҙем. .. Алдаһам, ер йотһон, ана Ҡояш!* Р. Низамов. **Ер йыртып** көслө йәмһеҙ тауыш менән (ҡысҡырыу һ. б.). *Ер йыртып үкереү.* ■ *Айыу тәненең әсетеүенә сыҙай алмай өңөнән килеп сыҡҡан һәм ер йыртып үкереп ебәргән.* Ж. Кейекбаев. **Ер кинәнгере!** *ҡарғ.* үлем теләп әйтелә. **Ер күтәрер әле** бер нәмә лә булмаҫ (еңел генә йығылған бала-сағаға, кешегә ҡарата әйтелә). *Сәгиҙә баланы күтәреп торғоҙҙо. Ә Хафиз ҡарт: — Ҡурҡма, ҡыҙым, бер ни ҙә булмаҫ,— тине,— ер күтәрер. Әҙәм балаһы йығыла-йығыла кеше була.* М. Тажи. **Ер күтәрә алмаҫлыҡ** үтә ныҡ ауыр, ҙур; кеше түҙә алмаҫлыҡ (ҡайғы-хәсрәт, енәйәт һ. б. тураһында). *Ер күтәрә алмаҫлыҡ ҡайғы. Ер күтәрә алмаҫлыҡ гонаһ.* **Ер ҡорто** май ҡуңғыҙының ваҡ ҡына ҡорттары, ҡарышлауығы. *Тик ер ҡорто тапты әмәлен, ул тамырға төштө кәһәрең.* М. Илбаев. **Ер ҡуйыны** ер аҫты, ерҙең эсе. *Геологтар, разведчиктар һәм бураулаусылар ер ҡуйынын аҡтара, яңы нефть, газ ятыштары эҙләй.* „Совет Башҡортостаны", 1976, 28 февраль. **Ер ҡуйынына инеү** үлеү. *Ер ҡуйынына инер ваҡытым еткән, ниндәй бабай кәрәк булһын миңә,— тине әбей* (Хикәйәттән). **Ер ҡыртышын ашау** *ҡар.* **ҡыртыш** [1]. **Ер майы** *һөйл.* 1) нефть. *Башҡортостанда был шыйыҡсаны борон-борондан ер майы тип йөрөт-*

*кәндәр.* Д. Буракаев; 2) кәрәсин. *[Атайым:] .. Әсенгәндән әйтәм .. еткереп булмай бит әле ер майы, әле шырпы .. бөтөп кенә тора.* Ғ. Ғүмәр. **Ер менән күк араһы** айырма бик ҙур тигән мәғәнәлә нимәнелер сағыштырғанда әйтелә. **Ер менән тигеҙләү** юҡ итеү, ҡырыу, бөтөрөү. *Беҙҙең бер снаряд фашистарҙың алға сығып барған йөҙләп һалдатын ер менән тигеҙләне.* Д. Юлтый. **Ер өҫтөндә йөрөү** йәшәү. **Ер тартыу** үлем яҡынайыу. *Бабайҙың хәлен белергә Абдулла ла килде.— Күпкә бармам, улым. Ер тарта мине,— тине.* Т. Сәғитов. **Ер тишегенә** (*йәки* **аҫтына) инерҙәй булыу** бик ныҡ оялыу, ғәрләнеү, ояттан ни эшләргә белмәү. *Исламов бойорокто уҡығанда, шундай уңайһыҙ хәлдә ҡалды, әгәр ер ярылһа, ер тишегенә инеп китер ине.* Ғ. Хәйри. **Ер тырмашып** ныҡ, көс менән тырышып. *Ер тырмашып донъя көтөү. Ер тырмашып йәшәү.* **Ер тубы** туп уйыны атамаһы (тупты ергә бәреп төрлөсә — ҡул, аяҡ, елкә, бил аша ергә төшөрөп тотоп уйнау, күберәк ҡыҙҙар уйнай). **Ер һиңкетеп** (*йәки* **һелкетеп)** ныҡ, көслө рәүештә, дәрт-көс менән. *Ер һиңкетеп бейеү. Ер һелкетеп йөрөү.* ■ *Бергә килеп ер һиңкетеп уйнап-көлөү бар беҙҙә* (Халыҡ йырынан). **Ер ярып, ер ярырҙай булып** үтә ныҡ тауыш менән, ҡурҡыныс итеп. *Ер ярырҙай булып ҡысҡырыу. Ер ярып үкереү.* ■ *Нигмәтйән [йоҡлап та китте] .. баһадирҙарса ер ярып хырылдарға ла тотонды.* Ф. Иҫәнғолов. **Килмәгән ере юҡ** матур, аҡыллы, уңған. *Килендең килмәгән ере юҡ. Егеттең килмәгән ере юҡ.* **Табан** (*йәки* **аяҡ) ергә теймәй** бик шәп йөрөгән кешегә ҡарата әйтелә. **Тамыр тартҡан ер** нәҫел-нәсәп күбәйеп, зат-ырыу бергә йәшәгән урын. *Нишләйһең, тамыр тартҡан ер. Айырылышыу ауыр булһа ла тыуған яҡтарыңа ҡайтыу ҙур бәхет, тине өләсәйем.* Р. Низамов. **Тотҡан ерҙән һындырыу** нимәнелер хәл иткәндә оҙаҡ уйлап тормай мәсьәләне ҡапыл хәл итеү. *[Дусмәт — Яппарға:] Һин дә тотҡан ерҙән шартлатып һындыра торған рабфак студентының ҡылыҡтарын ташламағанһың, дуҫ.* М. Кәрим. **Һәр** (*йәки* **бөтә) ерҙә** бөтә тирә яҡта, бөтә урында, тирә-йүндә. *Бәхет юлын аса һәр ерҙә: һаҙлыҡтарҙы баҡса итә, гигант ҡора ҡола яланға.* Ғ. Сәләм. *Күп урында тәмәке уттары баҙлай, бөтә ерҙә һөйләшәләр.* Д. Юлтый.

● *Алтын ерҙә ятһа ла тутыҡмаҫ.* Мәҡәл. *Атҡа менһәң, ат яҡшы, ергә төшһәң, ер яҡшы.* Мәҡәл. *Барыр ер, батыр ҡул юҡ.* Әйтем. *Ерҙең ҡылаһы — ямандың йолаһы.* Әйтем. *Ерҙән сыҡҡан ергә ҡайта.* Мәҡәл *Ере байҙың ире бай, ире байҙың иле бай.* Әйтем. *Ере барҙың еме бар.* Әйтем. *Илдә йөрөгән — ил таныр, ырҙа йөрөгән — ер таныр.* Мәҡәл. *Йылы ергә йылан эйәләшә.* Әйтем. *Килер ере киң булһын.* Әйтем. *Ҡара ерҙең ҡарыны киң.* Мәҡәл (бөтә кешене лә үлем ала тигән мәғәнәлә). *Тар ергә таяу* (берәй кеше йәки нәмә урынһыҙ мәшәҡәт тыуҙырған осраҡта әйтелгән әйтем). *Күктән көткән ерҙә табылды.* Әйтем.

**ЕРБЕСӘР** *и. иҫк.* Ер үлсәүсе.

**ЕРҘӘН** *бәйл. функцияһында кар.* **еренән.** *Ятҡан ерҙән тороу.* ■ *Ҡара, ҡара, атаһы, ҡара ниндәй һикерә! Талпынып та йылмайып та [бала] һөймәҫ ерҙән һөйҙөрә.* Ғ. Амантай.

**ЕРҘӘШ** *и. кар.* **яҡташ.** *Ял итеүҙе белмәй унда [Өфөлә] кеше — фронт өсөн эшләй ерҙәштәр.* Ә. Вәли.

**ЕРЕГЕҮ** [1] (ерек=) *ҡ.* **1.** Ергә тамыр ебәреү; тамырланыу. *Ереген үҫеү. Ныҡлап ерегеү.* ■ *Гөлдәр матур булып ереген, үҫеп китте.* Ф. Иҫәнғолов./ *күсм.* Бәйләнеү, берегеү. *Ергә ерегеү.* ■ *Күңелемә яңы йырҙар килә, йырҙарым да ергә ереккән.* И. Кинйәбулатов.

**2.** Үҫкән, булған ерендә нимәгәлер ныҡ береген, шуның менән бер булып, айырылғыһыҙ булып китеү. *Улар инде, әсә менән ул булыуҙан бигерәк, Сөм янындағы «Ҡыҙыл ҡая» тауының ереген үҫкән, Игеҙәктәр тип атап йөрөткән кеше һынлы ике сыйыр ташына оҡшайҙар ине.* Б. Бикбай. *Тамыры ташҡа ереккән ҡарағай, имән, ҡайыны — бары ла һөйгән Уралтау* (Ҡобайырҙан). / Нимә менәндер ныҡ берләшеп, үҙенең тәүге булмышын бөтөнләй юғалтыу. *Ереккән һукмаҡ.* ■ *Салауат яуында [баш күтәреүселәрҙең] ҡаҙыған окоптары ошо көнгә саҡлы .. бөтөнләй ерекмәй яталар.* М. Буранғолов. *Үлән үҫеп етекмәҫ, юшҡын төшөп ерекмәҫ илен һөйгән батырҙар быуат-быуат бер юлдан яуға сабып йөрөгән юл.* «Ҡуңыр буға».

**3.** *күсм.* Яңы ултырған урынға, яңы ергә өйрәнеү, шул ерҙе яҡын, үҙ күреп, яратып йәшәп китеү; үҙләшеү. *Ереген китеү. Ерегә алмау. Яңы ерҙә ереген йәшәп китеү.* ■ *Һиңә әйтә тип уйлама, улым. Шулай ҙа ереккәнде ер яратыңҡырай ул. Кем төйәкләнеп йәшәй, һәйбәт донъяның изгелеген шул күберәк күрә.* Н. Мусин.

● *Ереккәнде ер ярата.* Мәҡәл.

**ЕРЕГЕҮ** [2] (ерек=) *ҡ.* **1.** Биҙеү, ялҡыу. *Әшһеҙ тормоштан ерегеү.*

**2.** Берәр төрлө аҙыҡтан ныҡ биҙеү һәм икенсеһен бик ныҡ ашарға теләү; аш көҫәү (ауырлы ҡатын тураһында). *Ереген йөрөү.*

● *Ереккән йылан ите ашаған.* Әйтем.

**ЕРЕК** *и.* Ҡайындар ғаиләһенә ҡараған еүеш, һыулы ерҙә, яр буйҙарында үҫә торған мурт ағас. *Һаҙлыҡтағы ерек араһында тартай тартылдай.* Б. Бикбай. **Аҡ ерек** аҡһыл йәшел япраҡлы ерек. **Ҡара ерек** ҡарағусҡыл япраҡлы ерек.

♦ **Ерек ҡураһы** (*йәки* **ерек үләне)** *кар.* **еркәүек. Ерек тәртә** *йәки* **тәртәһе ерек** *кар.* **тәртә.**

**ЕРЕКЛЕК** *и.* Ерек күп үҫкән урын. *Ваҡ ереклек.*

**ЕРЕКЛӘҮЕК** *и. диал.* Еркәүек.

**ЕРЕКТЕРЕҮ** [1] *ҡ.* **1.** Ергә тамыр ебәртеү. *Ағасты еректереү.*

**2.** Яңы тупраҡҡа ҡулайлаштырыу. *Яңы сорт игенде еректереү.*/ *күсм.* Яңы ергә үҙләштереп, утраҡландырыу. *Кешеләрҙе яңы ергә еректерергә тырышыу.*

**3.** Ергә беркетеү. *Йөҙөп йөрөгән утрауҙы еректереп ҡуя торғайнылар.*

**ЕРЕКТЕРЕҮ** [2] *ҡ.* Биҙҙереү, бүктереү.

**ЕРЕНӘН** (*йәки* **ереңдән, еремдән)** *бәйл. функцияһында* **1.** =һған / =гән формаһындағы сифат ҡылым менән килеп, берәй эш-хәлдең башҡарылыу рәүешен белдерә: хәлдә, килеш, көйө. *Йоҡ-*

*лаган ереһән уяныу.* ■ *Буранбай .. кесәһенән махорка алырға кулын тыккан вакытта, ултырған ереһән йоклап китте, хырылдай башланы.* Д. Юлтый.

**2.** Хәбәр һөйкәлешенең киләсәк заман формалары менән килеп, ҡаршы ҡуйыуҙы аңлата. *Алмаҫ ереңдән алырһың. Бармаҫ ереңдән барырһың.* ■ *Көтөүҙе юғалтып йөрөгәнемдә лә белдерткем килмәне [Сафаға], һорар еремдән һораманым.* З. Ғәлимов.

**ЕРЕСЬ** [*рус.* ⟨ *гр.*] *и.* Өҫтөнлөк итеп килгән диндең ҡанундарына ҡаршы булған дини тәғлимәт; мөртәтлек.

**ЕРЕТИК** [*рус.* ⟨ *гр.*] *и.* Ересь яҡлы кеше; мөртәт.

**ЕРЕҮ** *к. диал.* Ерегеү, аш көҫәү. *Йөклө ҡатын аш ерей.*

**ЕРКЕ: ерке үлән** *диал.* еркәүек.

**ЕР-КҮК** *и. йыйн.* Ер һәм күк. *Бөтә ер-күк нурға сырмалған.* Ш. Бабич.

**ЕРКӘН** *и. диал.* Еркәүек.

**ЕРКӘНЕҮ** *к. диал.* Ерәнеү.

**ЕРКӘҮЕК** *и.* Роза сәскәләре ғаиләһенә ҡараған һыулы ерҙә үҫә торған ап-аҡ сәскәле, хуш еҫле, баллы дарыу үләне.

**ЕРЛЕ** *с.* **1.** Ере булған, ере бар. *Күп ерле колхоздар. Ерле булыу. Ерле итеү.* ■ *Ниндәй хурлыҡ, туғандар .. купецка тилмереп барып тороуҙар; ерле көйгә ерһеҙ булып ятыуҙар.* «Бабсаҡ менән Күсәк».

**2.** Билдәле бер урынға, өлкәгә ҡараған. *Ерле һөйләш.*/ Ошо урында йәшәгән, урындағы. *Ерле халыҡ.* ■ *Һалдаттарҙы кисәтегеҙ, ерле халыҡҡа ҡарата бер ниндәй ҙә уҫаллыҡ ҡылмаһындар — тине генерал.* Ғ. Аллаяров.

● *Ерле ере менән екән күле менән.* Мәҡәл.

**ЕРЛЕ** *киҫ.* Көсәйтеү мәғәнәһе бирә; һис, бөтөнләй. *Ерле көтмәгәндә. Ерле хәтер юҡ. Әйткәнде ерле тыңламай.* ■ *Аҙашырлыҡ яман таш ҡала, тип һөйләүҙәре ерле буш икән.* Ғ. Амантай.

◆ **Ерле юҡҡа** (*йәки* **юҡ өсөн**) бөтөнләй сәбәпһеҙ. *Ерле юҡҡа асыуланыу. Ерле юҡты һөйләү.* ■ *[Тимер:] Ерле юҡҡа буран ҡуптара ла ул Фатима.* Б. Бикбай. **Әйтәм ерле** бер нәмәнең сәбәбен ҡапыл төшөнгәндә әйтелә. *[Рәхимә:] Әйтәм ерле тауышың атайыңдыҡына оҡшап тора.* Һ. Дәүләтшина.

**ЕРЛЕК** *и.* **1.** Башҡа төҫтәре, биҙәктәре айырылып торған төп төҫ; фон. *Аҡ ерлекле тауар. Яулығының ерлеге һары.* ■ *[Тауарҙарҙың] береһенә ҡыҙыл ерлеккә зәңгәр биҙәктәр төшөрөлгән.* С. Агиш.

**2.** Ниҙеңдер яһалышы өсөн сығанаҡ, таяныс булған төп нәмә; нигеҙ. *Ижтимағи ерлек. Милли ерлек. Тарихи ерлек.* ■ *Повестағы [«Яҙҙы ҡаршылағанда»] һәр бер мөһим ваҡиға йәки күренештең үҙенең бер сығанағы, тарихи ерлеге бар.* Ғ. Хөсәйенов. *Коммунизм һалдаты беҙ хеҙмәткә тыуҙыҡ. Шатлығыбыҙ хыялдан бай, ерлегебеҙ ныҡ.* А. Игебаев.

**ЕРЛЕКЛЕ** *с.* **1.** Ерлеге (2 мәғ.) бар; нигеҙле. *Ерлекле ваҡиғаға таянып яҙылған әҫәр.*

**2.** Билдәле бер ергә, бер урынға хас. *Йырҙы төбәккә ҡулайлаштырып үҙгәртеү ерлекле материал менән һуғарып көсәйтергә тырышыу була.* К. Мәргән.

**ЕРЛЕКЛӘШТЕРЕҮ** *к.* Билдәле бер ергә, бер төбәккә ҡулайлаштырыу. *Ике ырыу сәсәндәре тарафынан был әҫәрҙе [эпосты] ерлекләштереп һөйләү күренеше бар.* М. Сәғитов.

**ЕРЛЕКҺЕҘ** *с.* Ерлеге (2 мәғ.) юҡ, сәбәпһеҙ; нигеҙһеҙ. *Ерлекһеҙ бәхәс. Ерлекһеҙ ғәйеп.*

**ЕРЛӘНЕҮ** *к.* **1.** *төш. ҡар.* **ерләү** [1]. *Миәс-1 станцияһынан һуң .. уң яҡтағы тау битендә башҡорт шағиры, тынмаҫ йөрәкле мәшһүр Мифтахетдин Аҡмулла ерләнгән булыр.* Р. Шәкүр.

**2.** *ҡар.* **ерегеү** *Ситтән килтерелгән орлоҡтоң сихәтен дә әйтер инем инде ... Беҙгә ерләнмәгән булғас, үҙеңдеке ише түгел.* Ғ. Ибраһимов.

**ЕРЛӘҮ** [1] *к.* Үлгән кешене ергә күмеү; ҡуйыу. *Мәйет ерләү йолаһы. Мәйетте ерләү.* ■ *Ҡыпсаҡтар ҙа ҡайтып китте батырын ерләп, Мәсем менән дошман булып, яманлашып.* «Бабсаҡ менән Күсәк».

**ЕРЛӘҮ** [2] *к.* Үҙ ереҙ, төйәгең күреп ҡабул итеп йәшәү. *Уралды ерләү.*

● *Кемдең ерен ерләһәң, шуның йырын йырларһың.* Мәҡәл.

**ЕРЛӘШЕ** [1] *к. урт. ҡар.* **ерләү** [1]. *Мәйетте ерләшеү.*

**ЕРЛӘШЕҮ** [2] *к.* **1.** Берәр ергә ултыраҡланыу; урынлашыу, нигеҙләнеү. *Ул [Брагин] Талҡаҫ күле эргәһендәге Иһән ауылына килеп ерләшкән* (Хикәйәттән)./ *күсм.* Шунда өйрәнеп китеү, ныҡыныу. *Ул ваҡытта ер йөҙөндә сын тыныслыҡ ерләшер.* М. Ғафури.

**2.** Яңы ергә, тупраҡҡа үҙләшеү; ерегеү. — *Ана бит, шәкәр сөгөлдөрө лә башта шулай яфаланы. Әле хәҙер ҡара ниндәй ерләшеп китте.* К. Мәргән.

**ЕРЛӘШТЕРЕЛЕҮ** *к. төш. ҡар.* **ерләштереү.**

**ЕРЛӘШТЕРЕҮ** *к. ҡар.* **еректереү** [1] 2. *Йылы яҡ үҫемлектәрен ерләштереү.*

**ЕРҺЕҘЛӘНДЕРЕҮ** *к.* Ерһеҙ итеү, ерһеҙ ҡалдырыу.

**ЕРҺЕҘЛӘНЕҮ** *к.* Ерһеҙ ҡалыу, ерһеҙгә әйләнеү. *Ярлылар ерһеҙләнә .. барған саҡта, ауыл байҙары ер, мал, хужалыҡ ҡоралдары туплай.* «Башҡортостан уҡытыусыһы», 1965, № 10.

**ЕРҺЕНЕҮ** *к.* Берәр ерҙе, урынды үҙ итеү. *Ерһенмәгән, яратмаған өсөн ауылын ташлап китте, тимәгеҙ.* А. Игебаев. *Таштуғайҡай һинең туғайыңды Урал ҡыҙҡайҙары ерһенмәҫ* (Халыҡ йырынан).

**ЕРҺЕТЕҮ** [1] *к.* Серетеп тупраҡҡа әйләндереү.

**ЕРҺЕТЕҮ** [2] *к. диал. ҡар.* **еректереү** [2].

**ЕРҺЕҮ** [1] *к.* **1.** Сереп ергә, тупраҡҡа әйләнеү; ерегеү. *Урал батыр үлгәстен, гүрендә ерһеп бөткәстен, гүре ҡалҡып киткән, ти.* «Урал батыр».

**2.** Серип боҙолоу. *[Атайым] .. инде хәҙер бишенсе йыл, һуғыштан ҡалған яраһы ерһеп, аяғына баҫа алмай ыҙалана.* Т. Килмөхәмәтов.

**ЕРҺЕҮ** [2] *к. ҡар.* **ерһәү.**

**ЕРҺЕҮ** [3] *к. диал. ҡар.* ерегеү [2].

**ЕР-ҺЫУ** *и. йыйн.* **1.** Ил, халыҡ биләп йәшәгән урын. *Ер-һыуҙы һаҡлау.* ■ *[Урал:] Мин — бер кеше, һеҙ — күп кеше, мин түгел, ә ер-һыу үлемһеҙ булһын.* «Урал батыр». — *Мо-*

*ратша карт та ер-һыуынан яҙып, хәлдән тайҙы бит.* Т. Хәйбуллин.

**2.** *һөйл.* Ниҙеңдер хисапһыҙ күп булыуын белдерә. *Был ерҙәрҙән Белорет яҡлап килеп, Блюхер тигән батырҙың ер-һыу гәскәре үтеп китте.* Ә. Вахитов.

♦ **Ер-һыу нлау** *кар.* **илау.** 1. **Ер-һыу хайуандары** умыртҡалылар класына ҡараған, ерҙә лә, һыуҙа ла йәшәй алған хайуандар, амфибиялар.

**ЕРҺӘҮ** *к.* Илде, тыуған ерҙе һағынып, зарығыу. *Ныҡ ерһәү. Ерһәп ҡайтыу.* ■ *Сырдарьяҡай буйы ҡомлоҡтор, аттарыбыҙ ерһәп түҙә алмай* (Халыҡ йырынан).

**ЕРӘ** *и.* **1.** Оҙон епкә теҙелгән эре ҡармаҡ. *Ерә һалыу.*

**2.** Эре балыҡ ҡармағы.

**ЕРӘН** *с.* Ҡыҙыл менән һары ҡатыш; ҡыҙғылт һары. *Ҡан ерән. Ҡола ерән. Сағыу ерән. Ерән ат. Ерән сәс. Ерән һаҡал.* ■ *Оҙонса йөҙө тургай йомортҡаһы төҫлө сып-сыбар: ерән кешеләрҙең күпселеге кеүек, Васяның бөтә тәнен һипкел баҫҡан.* Х. Мохтар. *Менгән генә атың ерән икән, елгән һайын алдан килә икән* (Халыҡ йырынан).

**ЕРӘНГЕС** *с. кар.* **ерәнес.**

**ЕРӘНДЕРЕҮ** *к.* **1.** Ерәнергә мәжбүр итеү. *Кешене ерәндереү.*

**2.** *эйһ. ф. кар.* **ерәнеү** 1. *Ерәндерә, күңел болғана.*

**ЕРӘНЕС** *с.* **1.** Бысраҡлығы менән ерәнеү хисе уятҡыс; сикәнес. *Ерәнес булыу.* ■ *[Әбей:] Минең кеше күңлө, һөйкөмһөҙ, ерәнес булыуымда .. ни гәйебем бар һуң.* Т. Хәйбуллин.

**2.** *күсм.* Намыҫһыҙлығы, түбәнлеге менән ытырғандырғыс. *Ерәнес кеше.* ■ *— Улар былтыр үҙҙәренең ерәнес эштәрен асыҡтан-асыҡ эшләй алһалар, хәҙер йәшенеп-боҫоноп ҡына эшләй башланылар.* Ғ. Дәүләтшин.

**ЕРӘНЕҮ** *к.* **1.** Бысраҡҡа һанап ытырғаныу; сикәнеү. *Батша [халыҡ] менән бер табаҡтан ашарға, бәр күрәгәнән ҡымыҙ эсергә ерәнә* (Әкиәттән).

**2.** *күсм.* Намыҫһыҙға, түбәнгә һанап, ытырғаныу. *Халҡы тибәргән кешенән йыландар ҙа ерәнә.* М. Хәй.

**ЕРӘНЛӘНЕҮ** *к.* Ерән төҫкә инеү. *Сәсе ерәнләнгән.*

**ЕРӘНСЕК** *с.* Ерәнеп барыусан. *Ерәнсек кеше. Ерәнсек булыу.*

**ЕРӘНСӘ** *и. кар.* **ерәнсәй.**

♦ **Ел теймәҫ ерәнсә** үпкәсел; һүҙ күтәрмәгән. *[Гөлйөҙөм:] Әй инде, ошо Яланбикә булһа, үйнағанды ла күтәрмәҫ. Бигерәк ел теймәҫ ерәнсеһең, ҡыйтыҡ.* Һ. Дәүләтшина.

**ЕРӘНСӘЙ** *и.* Ерән төҫтәге ат. *Ерәнсәй ҙә менән ай Күрәнсәй юргалайҙыр тура юл менән* (Халыҡ йырынан). **Ел етмәҫ Ерәнсәй** әкиәттәге бик етеҙ ат. *Иртәгеһенә ел етмәҫ Ерәнсәйгә атланып, был бай юлға сыға* (Әкиәттән).

**ЕРӘНҺЫУ** *с.* Әҙ генә ерән, ерәнгә тартым. *[Януарҙың] биле дуға кеүек бөгөлгән, ерәнһыу йөнө ҡаҫмаҡланып, урыны-урыны менән төләп бөткән.* «Ҡуҙыйкүрпәс менән Маянһылыу».

**ЕСАУЛ** [*рус.* ⟨ *төрк.*] *и. кар.* **яҫауыл.**

**ЕСЕМ** [*гәр.*] *и.* **1.** *физ.* Араауыҡтың билдәле бер өлөшөн биләп торған матди нәмә; араауыҡтағы айырым бер предмет. *Ҡаты есем. Шыйыҡ есем.*/ *мат.* Араауыҡтың һәр яҡтан сикләнгән бер өлөшө. *Геометрик есем.*

**2.** Йән эйәһенең матди сифаты; тән.

♦ **Күк есеме** астрономия фәне өйрәнә торған планета, комета, йондоҙ һ. б. йыһан объекттары.

● *Исемендә түгел, есемендә.* Мәҡәл. *Исеменә күрә есеме.* Әйтем.

**ЕСМАНИ** [*гәр.*] *с.* Тере организмдарҙың есеменә хас булған; мускул хәрәкәттәре менән бәйләнгән; физик. *Есмани көс.*

**ЕҪ** *и.* **1.** Төрлө нәмәләрҙең танауға һиҙелгән сифаты. *Ҡыркыу еҫ. Һаҫыҡ еҫ. Хуш еҫ. Аш еҫе. Бензин еҫе. Сәскә еҫе. Еҫ бөркөү. Еҫе булыу. Еҫе сығыу. Еҫ килә.* ■ *[Танауға] яңы һауған һөт еҫе менән быҫҡып янған тиҙәк еҫе килеп бәрелә.* Ғ. Ғүмәр.

**2.** Углерод янып бөтмәү сәбәпле сыҡҡан ағыулы газ. *Самауыр еҫе.* ■ *[Булат:] Әллә кистән башҡа еҫ тейгән, күңел болғана.* К. Кинйәбулатова. *[Таубатыр:] Башыма еҫ тейеп ятҡанмын, яңы ғына ҡалҡып торҙом, тип яуап ҡайтарған* (Әкиәттән).

♦ **Еҫ алыу** еҫтән һиҙеп, кемдең йәки нимәнеңдер барлығын эҙен белеү; эҙенә төшөү. *[Әбделнәғим:] Айыуҙың береһе еҫ алды бит, кәһәрең. Ҡапыл туҡтап, башын .. бороп еҫкәнде лә, яман үкереп, мин менеп барған ҡарағайға ҡарай сапты.* Н. Мусин. **Еҫе лә ҡалманы** йәки **еҫе лә юҡ** бөтөнләй юҡҡа сыҡты, юҡ булды. *Йыйылыштың еҫе лә .. ҡалманы. Халыҡ ягаға килеп һуғышырға тотондо.* И. Насыри. *Ағастың, йәшеллектең үҙе түгел, еҫе лә юҡ.* Ғ. Дәүләтшин. **Еҫ тейеү** ҡуҙҙан сыҡҡан газ менән ағыуланыу. *[Рәшиҙә:] Әллә башыма еҫ тейҙе инде, ҡолаҡтарым да шаулап тора.* М. Тажи. **Танауға еҫ инеү** *кар.* **танау.**

**ЕҪЕ-ЕЛЕ: еҫе-еле юҡ** эҙһеҙ юҡ, эҙе лә юҡ. *Һыңарайаҡ уянып китһә, теге әбейҙең еҫе-еле юҡ, ти* (Әкиәттән).

**ЕҪЕР** *и. кар.* **еһер.**

**ЕҪКӘНЕҮ** *к.* **1.** Тегенән-бынан еҫкәү. *Еҫкәнеп йөрөү.* ■ *Уның [байҙың] артынан еҫкәнеп, ҡойроғон һәлберәтеп, әлеге эт һыныңдағы Бәлә бара* (Әкиәттән).

**2.** *күсм.* Аҫтыртын ғына белешеү, эҙләнәү. *— Ана, ҡоҙа булған нәмәң еҫкәнеп килеп етте! Ҡунаҡ саҡырғанды белеп, юрамал йөрөй ул һалбыр ирен!* (Әкиәттән).

**ЕҪКӘРЕНЕҮ** *к. диал. кар.* **еҫкәнеү** 1.

**ЕҪКӘТЕҮ** *к.* Нимәнеңдер еҫен танауға тарттырыу. *Дарыу еҫкәтеү. Хушбуй еҫкәтеү.*

**ЕҪКӘҮ** *к.* **1.** Берәй нәмәнең еҫен танауға тартыу. *Хушбуй еҫкәү.* ■ *Моңланып еҫкәргә ҡалды тәмле еҫле гөлдәре.* Ш. Бабич.

**2.** Үпкәгә алыу; һулау. *Һауа еҫкәү.* ■ *Бай йәшеллектәр хуш еҫтәргә мансылып, шуларға күмелеп ятҡан өйҙәр .. һауа саф — еҫкәп, эсеп туйғыһыҙ.* Ғ. Дәүләтшин.

**3.** *күсм.* Күреп, баштан кисереп белеү. *[Абыстай:] Мин әле йәп-йәш, кеше ҡорона яңы еттем, донъя йәшерендәрен яңы еҫкәй башланым. ..*

*Йәш йөрәгем әле булһын тыныслыҡ таба алмай.* Т. Хәйбуллин.

**ЕҪ-ҠОҪ** *и. йыйн.* Төрлө насар еҫтәр. *Кейем-каралдыны еллэтеп, еҫен-ҡоҫон бөтөрөү.* ■ *Һи-и, балаҡайым,— тине түҙмәйенсә Хәтмулла карт. Бөгөн генә өлгөргән, бөгөн генә һуғылған ашлыҡта ниндәй еҫ-ҡоҫ булһын инде.* З. Ғәлимов.

♦ **Еҫе-ҡоҫо ҡалманы** (*йәки* **юҡ**) эҙһеҙ юҡ, эҙе лә юҡ.

**ЕҪЛЕ** *с.* **1.** Ниндәйҙер (хуш, һаҫыҡ, әсе, сөсө һ.б.) еҫе булған, шул еҫте сығарып, аңҡытып торған. *Еҫле сәскә. Әсе еҫле. Ҡырҡыу еҫле. Еҫле булыу.* ■ *Ихатаның лапаҫ менән ҡапланған мөйөшөндә бер рус крәҫтиәне һаман йоҡламаған, йоҡоно ҡасыра торған әсе еҫле тәмәке тарта.* С. Агиш. / Хуш еҫле. *Еҫле гөлдәр үлтыртайыҡ, еҫле гөл еҫле була* (Халыҡ йырынан).

**2.** Еҫе (2 *мәғ.*) бар, еҫ тейҙерә торған. *Еҫле мунса. Еҫле самауыр.* ■ *Килен мунса яға белмәй, мунса яҡһа, еҫле була.* Т. Арслан.

♦ **Еҫле гөл** *кар.* **гөл. Еҫле һабын** бит-ҡул йыуыу өсөн булған (ғәҙәттә хуш еҫе булған) һабын; кҙ һабыны.

**ЕҪЛӘНЕҮ** *ҡ.* Боҙолоп, һаҫыҡ еҫ алыу. *Ит еҫләнеү. Еҫләнеп бөтөү. Балыҡ йылыла тиҙ еҫләнә.*

**ЕҪНӘҮ** *ҡ. диал. кар.* **еҫкәү** 1.

**ЕҪСЕЛ** *с. һөйл.* Еҫ тойоуға шәп, еҫкә һиҙгер.

**ЕҪСӘН** *с. һөйл.* Тиҙ боҙолоп, еҫләнеп барған.

**ЕҪТӘҮ** *ҡ. диал. кар.* **еҫкәү** 1.

**ЕТДИ** [*ғәр.*] *с.* **1.** Тыныс аҡыл менән уйлап эш итеүсән. *Етди кеше. Етди булыу.* ■ *Аҡназаровтың һаман өйләнмәй йөрөүен дә күптәр хупланы, етди егет, ашыҡмай тип баһаланы.* Ә. Вәли.

**2.** Үҙ-үҙенә талапсан булған, эшкә яуаплы ҡараған. *Етди мөнәсәбәт. Мәсьәләгә етди иғтибар биреү. // Кем дә кем етди ҡыланһа, теләккә етер, тимен.* М. Ғафури.

**3.** Ҙур әһәмиәткә эйә; мөһим. *Етди мәсьәлә. Етди эш. Етди үҙгәреш. Етди итеү.* ■ *Әйтергә кәрәк, һуңғы ваҡытта ерҙе файҙаланыу эшендә етди кәмселектәргә юл ҡуйылды.* «Совет Башҡортостаны», 1965, 26 май.

**4.** Ныҡлы иғтибар, тәрән уй, талапсанлыҡ сағылған (сырай, тон, тауыш һ. б. ҡарата). *Етди тон. Етди ҡараш. Етди сырай менән тыңлау. // Етди һөйләшеү.* **Етди төҫ алыу** 1) сырайға етдилек биреү, үҙен етди тотоу; 2) көсөргәнешле, ҡатмарлыға әйләнеү (эшкә ҡарата).

**ЕТДИЛЕК** *и.* Етди булған хәл. *Мәсьәләнең етдилеге. Йөҙгә етдилек сығарыу.* ■ *Буранбайҙың төҫөндә ниндәйҙер бер етдилек бар, ул көлмәй.* Д. Юлтый. *[Йәнтимер] гәҙәтенсә эштең ауырлығын, етдилеген күрһәтер өсөн ҡаштарын йыйырып бер аҙ уйлап ала.* С. Агиш.

**ЕТДИЛӘНДЕРЕҮ** *ҡ.* Етдигә әйләндереү, етди итеү. *Тауышты етдиләндереү. Эште кәрәгенән артыҡ етдиләндереп ебәреү. Тормоштағы үҙгәрештәр йәштәрҙе етдиләндерҙе.*

**ЕТДИЛӘНЕҮ** *ҡ.* Етдигә әйләнеү. *Йөҙө етдиләнде. Эштәр етдиләнеп китте.* ■ *Крәҫтиән ҡуҙғалыштарының етдиләнә барыуы батша хөкүмәтен ҡурҡыта төштө.* Ғ. Ғисмәти.

**ЕТДИӘТ** [*ғәр.*] *и. иҫк.* Етдилек. *Кеше һәр ваҡыт етдиәт менән генә лә йәшәй алмай. Шаярыу, уйын-көлкө, һөжүләрҙе лә теләй.* Т. Йәнәби.

**ЕТЕ** [1] *төп. һ.* **1.** 7 һаны. *Ете йөҙ. Ете етең ҡырҡ тугыҙ.* / Кем йәки нимәнеңдер 7-гә тиң иҫәбе. *Ете кеше. Ете төн. Ете йәш. Ете быуын.* ■ *Етегән дә тигән ете йондоҙ ете әйләнә таңдар атҡанса* (Халыҡ йырынан). *Былар ете көн, ете төн көрәшкән. Шунан килеп Алп батыр ҡыҙҙы еңгән.* «Алпамыша».

**2.** *һөйл.* Һандың, юғары дәрәжәһен белдереү өсөн ҡулланыла. *Ете ҡат ер аҫты. Ете ҡат күк өҫтө. Ете төн уртаһы. Ете юл саты. Ете йоҙаҡ менән бикләү. Ете ҡат тир сығыу. Ете ҡат үлсәү.*

**3. етеһе** *и. мәғ.* Мосолман диненсә, кеше үлгәндең етенсе көнөн билдәләгән көн һәм шунда уҡылған аят. *Етеһен үткәреү.* ■ *Ҡартты ҡуйып, өсөн үткәреп, етеһен уҡытыуға, Айтуған менән Көнтуғанға икенсе ҙур ҡайғы килә, ти* (Әкиәттән).

♦ **Ете ата** *диал.* ата-баба **Ете быуын** һәр ир-атҡа белеү мотлаҡ һаналған туғанлыҡ хисабы. **Ете ҡат ер аҫтында йылан көйшәгәнен белә** бөтә нәмә тураһында хәбәрҙар булған, ҡайҙа нәмә булғанын артығы менән белеп йөрөгән кеше тураһында әйтелә. **Ете ят** 1) ете быуындан һуңғы нәҫел-нәсәп түгел (туғанға һаналмай). *Мәсем хан Сура батырҙың ете ятына хәтле ҡырып бөтөрөргә ант иткәйне бит* (Эпостан); 2) бөтөнләй туған булмаған, ят. *Сыбыҡ осо хәтле лә кәрҙәшлегебеҙ юҡ, мин уларға ете ят кеше.* Ф. Иҫәнғолов. **Ете ятып бер төшөнә инмәү** һис бер ваҡыт уйлап ҡарамау, иҫкә алмау, күҙ алдына һис килтермәү, онотоу. *Ете ятып бер төшөмә инмәгән кеше тотһон да: «Ҡоҙа»,— тип килеп күрешһен әле.* Н. Ҡәрип.

**ЕТЕ** [2] *с. диал.* **1.** Үткер, осло. *Ете беҙ.*

**2.** *күсм.* Төҫө, еҫе, тәме үткер, көслө. *Ете май. Аш ете булған.*

● *Ете ҡыҙыл тиҙ уңа.* Мәҡәл.

**ЕТЕГӘН** *йәки* **Етеган йондоҙ** *астр.* Төньякта сүмес һымаҡ урынлашҡан ете яҡты йондоҙҙан торған йыл буйы күренгән йондоҙлоҡ; оло етегән. ■ *Күк йөҙө асыҡ. Етегән йондоҙ ҙа таңға ҡарай ҡойроғон борған ине инде.* Б. Ишемғол. *Етегәндең алтын ижауынан бергә эстек яҙҙың моңдарын.* Р. Ғарипов. *Етегән генә тигән ете йондоҙ Өлкәрҙәрен ташлап китә алмай* (Халыҡ йырынан). **Кесе Етегән** Төньяҡ полюсҡа яҡын булған, сүмескә оҡшап урынлашҡан ете йондоҙҙан торған йондоҙлоҡ (ул йондоҙлоҡтоң иң осондағыһы Тимерҡаҙыҡ йондоҙо).

**ЕТЕҘ** [1] *с.* **1.** Эшкә, хәрәкәткә сос, өлгөр; уңған. *Етеҙ ҡыҙ. Йомошка етеҙ. Етеҙ булыу.* ■ *Совхоз эше мохтаж икән етеҙ беләклеләр көсөнә.* Д. Юлтый.

**2.** Шәп, тиҙ, йылдам. *Етеҙ хәрәкәт.* ■ *Тау араһындағы үҙәндән етеҙ ағышлы тар ғына йылға килеп сыға.* Ф. Иҫәнғолов. / Тиҙ хәрәкәтле, тиҙ йөрөшлө. *Етеҙ ат. Етеҙ ел. Етеҙ кош. // Етеҙ атлау.* ■ *Һыу сәсрәтеп мостовойҙан етеҙ автобустар уҙа.* Ғ. Сәләм. *Төшөп киләм саңғыла.*

*Текә ерҙә еләм етеҙ, һөҙәк ерҙә яй ғына.* Ә. Вәхитова. *Берҙә картая белмәйһең, Ғариф ағай,— тине Ғәләү, уның һыҙланыуһыҙ-ниһеҙ етеҙ хәрәкәтенә һокланып.* В. Бикбай.

● *Етеҙ бала етегә еткәнсә тешәй.* Мәҡәл.

**ЕТЕҘ** [2] *с.* Тәме үткер. *Ҡаҙ майы етеҙ, ашауға ауыр.*

**ЕТЕҘ** [3] *с. ҙар.* **етек** [1] 1. *Етеҙ сәс.*

◆ **Етеҙ юл** *ҡар.* **юл** [1] 1.

**ЕТЕҘЛЕК** *и.* Етеҙ булыу сифаты. *Ҡайтыуына бер-ике генә ай булһа ла, ул [Гәрәев] үҙенең етеҙлеге, батырлығы арҡаһында үҙенә тиҙ күренекле урын алып өлгөрҙө.* И. Насыри. *Байназар атын бороп, килгән етеҙлеге менән үк кире сапты.* Б. Бикбай.

**ЕТЕҘЛӘЙҘЕРЕҮ** *к.* Етеҙгә [1] (2 мәғ.) әйләндереү. *Хәрәкәтте етеҙләндереү.*

**ЕТЕҘЛӘНЕҮ** *к.* Етеҙгә [1] (2 мәғ.) әйләнеү.

**ЕТЕК** [1] *с.* **1.** Үҫеп оҙонайған, еткән. *Етек тырнаҡ. Етек һаҡал.* ■ *Ул [Тимер] йыуан бармаҡтарын етек сәстәренә аралаштырҙы.* Б. Бикбай. / Үҫеп, йәше еткән; ҙурайған. *Етек ҡыҙҙар булһа — Бикйәнде күреп һөйләшеү хыялында.* «Бикйән Мәргән».

**2.** Үҫеп, тейешле сифатҡа еткән; етлеккән. *Ата-әсәһе ҡыуана етек бала күргәнгә.* М. Буранғолов.

**3.** *күсм.* Сифаты камил, өлгөргән. *[Ҡарасәс:] Саф көмөштәй телең йышылғанға һин һөйләйһең һүҙҙең етеген.* Х. Ғәбитов.

◆ **Етек юл** 1) кеше йөрөмәү сәбәпле үлән үҫеп бөткән һуҡмаҡ. *Мәскәү китһә — ил китер, илһеҙ бала кем булыр? Иҙел китһә — юл бөтөр, етек юлда кем йөрөр?* М. Буранғолов; 2) тура, түтә юл. *Иртәнсәкәй тороп һыуға барҙым йоморолай етек юл менән* (Халыҡ йырынан).

**ЕТЕК** [2] *с. диал.* Етеш. *Етек тормош. Етек йәшәү.*

**ЕТЕЛЕ** *с.* Үлсәме ете берәмеккә тиң. *Етеле шәм. Етеле калуш.* ■ *Етеле лампа яҡты ғына яна. Уның тирәһендә төн күбәләге өйрөлә.* Б. Хәсән.

**ЕТЕЛЕК** *и.* Ете һаны менән билдәләнгән нәмә.

**ЕТЕЛЕҮ** *к. эйһ. ф. ҡар.* **етеү** [1] 5. *Бына ҡырҡ икегә лә килеп етелде.* З. Биишева.

**ЕТЕЛӘП** *сама һ.* Ете тирәһе, етегә яҡын. *Етеләп кеше. Етеләп дәфтәр.*

**ЕТЕЛӘТӘ** *р.* Ете тапҡыр, ете тапҡырға. *Етеләтә артыҡ. Етеләтә кәм.*

**ЕТЕМ** [*ғәр.*] *и.* **1.** Ата-әсәһе йәки икеһенең береһе булмаған бала йәки үҫмер. *Етем бала. Етем ҡыҙ. Етем булыу. Етем итеү. Етем ҡалдырыу. Етем ҡалыу. Етем үҫеү. Етемдәрҙе ҡарау. Етем тәрбиәләү.* ■ *Етем баланың төҫөнән үк етем икәне беленеп тора, .. ҙур кешеләр кеүек, хәсрәтле була ул.* М. Ғафури. *[Ғәйшә] етем үҫкән шул меҫкен, бер нәмә лә белмәй. Төрлө әҙәп, оят кеүек хөрәфәттәр уға әсә һөтө менән инмәгән.* А. Карнай. *Аҡтүбә .. толдарҙың, етемдәрҙең зарына ҡолаҡ һалып, тура килгәндә ярҙам иткеләп тә ҡуя, ти* (Әкиәттән). **Үкһез етем** атаһы ла, әсәһе лә юҡ, бөтөнләй яңғыҙ. *Мин ун ике йәшемдә сакта атай ҙа, әсәй ҙә үлеп үкһеҙ етем булып ҡалдым.* М. Ғафури. *Етем үҫте ул [Фатих]. Ә, юҡ, етем тип ни, бөтөнләй үк үкһеҙ етем түгел.. әсәһе менән генә.* К. Мәргән.

**2.** Ире үлгән, ирһеҙ, тол. *Етем булыу. Етем ҡалдырыу. Етем ҡалыу.* ■ *Бына ошо ябай ауыл ҡатыны [Мәфтуха] .. эштән бушыраҡ кистәрҙә күрше-тирәләге етем ҡатындарҙың, ирҙәре фронттан ҡайтмаған һалдаткаларҙың күңелдәрен күтәрә .. ине.* Х. Кәрим. / Ҡараусыһы юҡ, ҡараусыһыҙ, яңғыҙ. // *Етем әбей. Етем бабай. Етем ҡалыу.*

● *Атаһыҙ бала етем түгел, әсәһеҙ бала етем.* Мәҡәл. *Етем быҙау аҫыраһаң, ауыҙың-моронаң май булыр, етем бала аҫыраһаң, ауыҙың-моронаң ҡан булыр.* Әйтем. *Етем бала илаһа, ер-күк илар.* Әйтем. *Етем ҡорһағы ете ҡат.* Әйтем. *Етем тыуған бала үҙ кендеген үҙе ҡырҡыр.* Әйтем.

**ЕТЕМ-ЕҺЕР** *и. йыйн.* Етем бала-саға, етеш кешеләр. *[Әҙһәм карт:] Батшалар һуғышалар-һуғышалар ҙа бер-береһенә ер бирешеп яраша торғандар, тик бына әҙәм ҡырылыр инде, етем-еһер күбәйер.* Ж. Кейекбаев. *[Һәубән:] Сура батырҙан ҡот йыйып, батыр тыуған затым бар; етем-еһер күҙ йәшен һыҡратмаҫҡа антым бар.* «Аҡбуҙат».

**ЕТЕМ-ЙӨҪӨР** *и. диал.* Етем-еһер.

**ЕТЕМЛЕК** *и.* Етем булыу хәле. *Бала сағым етемлектә үтте, әсә иркәләүен күрмәнем.* Я. Ҡолмой. *Һаҡла ҡыҙҙы яман күҙҙән, хыянаттан — тоғро йәрҙе, етемлектән — сабыйҙарҙы.* Р. Бикбаев.

**ЕТЕМСЕЛЕК** *и. ҡар.* **етемлек.** *Етемселек менән ғүмер итеү. Етемселектә йәшәү.*

**ЕТЕМҺЕРӘТЕҮ** *к.* Етем балаға ҡараған кеүек кәмһетеп ҡарау, ыҙа, нужа күрһәтеү, етем һымаҡ итеү. *[Айбулат Гөлйөҙөмгә:] — Етәр, Гөлйөҙөм, илама. Бер мин түгел бит, ил менән. Илама. Балаларҙы яҡшы ҡара, етемһерәтмә.* Һ. Дәүләтшина.

**ЕТЕМҺЕРӘҮ** *к.* Үҙеңде етем кеше һымаҡ итеп һиҙеү, етемлектә ыҙа сигеү, бойоғоу, етемлекте ауыр кисереү. *Етемһерәп ҡалыу.* ■ *Башҡа балалар атаһына иркәләгәндә, уның да минең алға ултырып иркәләнгеһе, һөйҙөргөһө килә булыр. Шуның өсөн минең исемдән тағы бер үп. Ҡосаҡла. Ул етемһерәмәһен.* Б. Хәсән. / Хужаһыҙ, ташландыҡ хәлдә булыу. *Байгилдин көрһөнгәндәй итеп тәҙрә ҡапҡастары бикле торған етемһерәп ултырған бер өйҙө күрһәтте.* Х. Ғиләжев. *Әйберҙәрҙе йыйып төйнәгәндәр. Өй эсе етемһерәп ҡалған.* Я. Вәлиев. / *күсм.* Яңғыҙлыҡта, ҡараусыһыҙ булыу, етем һымаҡ, бойоҡҡан һымаҡ күренеү. *Тау битләүҙәрендә, ҡаялар араһында .. кәкре-бөкрө ҡайындар ғына етемһерәп ултыра.* Ә. Бикчәнтәев. *Тигеҙ дала күкрәгендә йәшәй, етемһерәп, яңғыҙ Йөрәктау.* Ҡ. Даян.

**ЕТЕМҺЕТЕҮ** *к. ҡар.* **етемһерәтеү.** *Баланы етемһетеү.*

**ЕТЕМҺЕҮ** *к. ҡар.* **етемһерәү.**

**ЕТЕН** *и.* **1.** Һабағынан сүс, орлоғонан май алына торған үҫемлек. *Оҙон етен. Етен майы. Етен сәсеү.* **Етен тапаткыс** етен йомшарта торған машина.

**2.** Шул үҫемлектең сүсе. *Етен иләү.* / Шул сүстән иләнгән еп. // *Етен күлдәк.* ■ *[Батша —*

*килендәренә:] Йә, мин биргән етендән күлдәк теген килтерҙегеҙме?* (Әкиәттән).

**3.** *с. мәг. күсм.* Асыҡ һары (сәскә ҡарата). *Бөҙрә сәсең әллә етен инде, әлле инде алтын.* Х. Ҡунаҡбай.

♦ **Тау етене** сүсләнеп торған йомшаҡ тау ташы; мамыҡ таш.

● *Етен сәсһәң, күлдәк кейерһең.* Мәҡәл.

**ЕТЕНСЕ** *рәт һ.* Урын тәртибе 7 менән билдәләнгән. *Етенсе класс. Етенсе көн. Етенсе урын. Етенсе бала.* ■ *Бер аҙҙан һуң етенсе аҡҡош килеп .. мамыҡ тунын һалып, тегеләре янына күлгә төшкән. Күлгә инеү менән улар береһенән-береһе матур ете ҡыҙға әйләнгәндәр* (Әкиәттән).

**ЕТЕНСЕЛЕК** *и.* Етен үҫтереү менән шөғөлләнгән ауыл хужалығының бер тармағы. *Етенселек менән шөғөлләнеү. Етенселектең төп районы — СССР-ҙың Европа өлөшөнөң Төньяҡ-Көнбайышы.* ■ *Өлкәндә ауылындағы «Ударсы» колхозы етен үҫтереү менән танылған. Был колхоз йыллыҡ килеренең яртыһын етенселектән ала.* М. Хисмәтов.

**ЕТЕР-ЕТМӘҪ** *р.* Етерлек түгел, әҙ; таҡы-тоҡо (күбеһенсә аҙыҡҡа һ. б. ҡарата). *Етер-ет мәҫ аш. Етер-етмәҫ аҙыҡ.* ■ *Ул Айбулат менән әсәһенә йылына ни бары ун биш-егерме бот иген, малға етер-етмәҫ бесән, күп ваҡытта һалам .. бирә килде.* Һ. Дәүләтшина. *Табаҡтағы бишбармаҡ етер-етмәҫ кенә булып ҡалды.* Т. Йәнәби. / Кәрәгенсә түгел, күләме әҙ, ҡыҫҡа һ. б. *Мейес эргәһенә етер-етмәҫ түшәлгән кейеҙҙең сите тәңгәлендә Хәмдиәнең йәш балаһының сәңгелдәге элеүле тора.* Һ. Дәүләтшина.

**ЕТЕР-ЕТМӘҪТӘН** *р.* **1.** Кәрәк еренә, урынына барып етмәгән хәлдә, етмәҫ элек, етеп өлгөрмәҫ элек. *Ҡайтып етер-етмәҫтән. Ҡыуып етер-етмәҫтән.* ■ *[Убырлы ҡарсыҡ] ҡыуып етер-етмәҫтән: — Киленкәйем, ултыртһана, аяҡтарым бик талды! — тип ҡысҡыра икән* (Әкиәттән).

**2.** Өлгөрмәгән, кәрәк кимәленә етмәгән хәлдә. *Үҫеп етер-етмәҫтән өҙөү. Өлгөрөп етер-етмәҫтән ашау.* ■ *Йәштәр уны [сиренде] яраталар һәм саманан тыш яратҡангамы, сәскә атып етер-етмәҫтән уның ботаҡтарын һындырып бөтөрәләр.* Ә. Мортазин.

**ЕТЕРЕҮ** *ҡ. диал.* **1.** Аҙағына еткереү, өлгөртөү, тамам итеү; бөтөрөү. *[Кәләнфер:] Йәгеҙ, егеттәр, һәләт булығыҙ, туланы тиҙерәк етерәйек!* Х. Ғәбитов.

**2.** *кусм.* Юҡҡа сығарыу, юҡ итеү; бөтөрөү. *[Ҡарасәс:] Ана тора, ҡайным малға һатһа .. яңғыҙ ҡыҙын, әйҙә, етерһен!* Х. Ғәбитов. *Хәйҙәр бүр Абдулланың атын һағалап йөрөй ине, етерҙе ахыры.* Т. Морат.

● *Һуҡҡан үлтерер, саҡҡан етерер.* Мәҡәл.

**ЕТЕРЛЕК** *с.* **1.** Күләм-самаһы ҡәнәғәтләнерлек, тейешле күләмдә, кәрәк ҡәҙәр булған; еткелек, еткән. *Етерлек нәмә. Етерлек итеп әҙерләү.* ■ *Ашығыс ғәскәри эштәр өсөн ҡыҫҡа төндәр ҙә, оҙон көндәр ҙә етерлек түгел.* Һ. Дәүләтшина. *Айыуғолаҡ бер көн эсендә йылға етерлек утын ташыған* (Әкиәттән).

**2.** *р. мәг.* Саманан артыҡ, бик күп. *[Мораташа:] Уның күрһәткән хурлығы етерлек булды.* Т. Хәйбуллин. *Беҙ бының ҡыйынлығын етерлек татыныҡ инде.* С. Агиш.

**ЕТЕҮ** [1] *ҡ.* **1.** Нимәнеңдер артынан ҡыуып килеп, шул нәмә менән тигеҙләшеү, йәнәшәләшеү. *Йүгереп етеү. Ҡыуып етеү.* ■ *Күп ҡыуа торғас, ҡуян арыны, бара алмай туҡтала. Мин етеп, таш, кәҫ менән орғас, сабырға уҡтала.* Ш. Бабич. *Үрелдем — тота алманым, йүгерҙем — етә алманым* (Халыҡ йырынан). / Сифат-дәрәжә йәһәтенән тиңләшеү. *Ләлә әйтә: «Бесәй яҡшы!» Фәрит: «Етмәй,— ти,— эткә!»* Ф. Рәхимғолова.

**2.** Бара-бара бер урынға өлгәшеү. *Ауылға етеү. Ҡапҡа төбөнә етеү. Өй тапҡырына етеү.* ■ *Һуҙҙең ошо еренә еткәндә, .. кәмәбеҙҙең мороно яр ситен[дәге] һал ҡабырғаһына дыңҡ итеп барып бәрелде.* Т. Йәнәби. *Һуғышта алған дан менән Яйыҡҡа еткән Бүгәсәү.* Салауат Юлаев. / Кемгәлер билдәле булыу, ишетелеү. *Һалдаттар араһында башланған бола начальствоға еткән булһа кәрәк.* Д. Юлтый.

**3.** Алдан билдәләп ынтылған нәмәгә өлгәшеү. *Маҡсатҡа етеү.* ■ *Ниәтләнеп егет атҡа менһә, ниәтенә етмәй булырмы?* (Халыҡ йырынан).

**4.** Булмышҡа, ғәмәлгә килеү (ваҡыт, мәл, эш-хәрәкәт төшөнсәләренә ҡарата). *Китер көн етте. Көҙ етте. Яҙ етте. Төш етте.* ■ *[Хасбулат:] Бына ай ҙа ҡалҡты, хикәйәтте һөйләр саҡ етте.* З. Бишева. *Шоңҡар ҡарттың кесе улына ла сират еткән ханға барырға.* Б. Вәлит. *Һауымы еткән һыйырҙар мөңрәп сығыр быҙауһыҙ.* «Аҡбуҙат».

**5.** Билдәле бер йәшкә яҡынлашыу, билдәле бер йәште тултырыу. *Иллегә [илле йәшкә] етеү. Йәше йөҙгә етте.*

**6.** Ниндәйҙер эш-хәлде башҡарыу, эшләү кимәлендә булыу, тороу. *Ахыр сиккә етеү. Илар сиккә етеү.* ■ *Тел тейҙерер урын да юҡ ҡымыҙға, әбейҙәрҙең эше еткәс ҡумыҙға.* М. Кәрим. *Ауыр һүҙҙәр әйтешкәк, хатта йоҙроҡҡа етә яҙҙыҡ.* Д. Юлтый.

**7.** Үҫеп, бала йәшенән сығыу; бәлиғ булыу, ҙурайыу. *Еткән ҡыҙ.* ■ *Һәр өй тәңгәлендә бәпкәләре етеп бөткән ҡаҙ көтөүҙәре ята.* З. Бишева.

**8.** Үҫеп, эшкә ашыр дәрәжәгә килеү; өлгөрөү. *Бесән етте. Иген етә.* ■ *Арыштан ҡалмай, бойҙай менән һоло ла ағарып етеп килә.* М. Кәрим. *Сабындарҙа үлән тулҡынлана, бесән етте, бесән өлгөрҙө.* Б. Вәлит.

**9.** Саманан артыҡ үҫеү (сәс-һаҡал, тырнаҡҡа ҡарата); оҙонайыу. *Мыйығы еткән. Сәсе еткән. Тырнағы еткән.* ■ *Кемдер бераү.., ирендәре кипкән, һаҡалдары етеп, сал инә башлаған, .. Мөлөк ағайға ҡарай килә.* Т. Хәйбуллин.

**10.** Хәл ҡылымдың *-п* формаһындағы һүҙ менән килеп, ярҙамлыҡ ҡылым сифатында ҡушма ҡылым яһай: а) хәрәкәттең тамамланғанын белдерә. *Барып етеү. Килеп етеү. Ҡыуып етеү.* ■ *Баштауға ҡайтып етерлек хәл ҡалманы.* М. Тажи. *Хыялдар менеп етмәҫлек бейек ул беҙҙең Ватан.* Р. Ниғмәти; б) эш-хәлдең камиллыҡҡа өлгәшкәнен белдерә. *Өлгөрөп етеү.* ■ *Төҙәлеп етмәгән көйө йөрөп өҙләктем. Бешеп етмәгән балан;* в) *кубр. юкл.* эш-хәрәкәттең һөҙөмтәһен кәметеп күрһәтә. *Аңлап етмәү. Белеп*

*етмәү. Килешеп етмәү. Ышанып етмәү.* ■ *Йәнтимергә был яуап [окшап] етмәне.* С. Агиш.

♦ **Ат еткән ергә ат, хат еткән ергә хат ебәреү** бөтә яҡҡа хәбәр таратыу. *Ат еткән ергә ат, хат еткән ергә хат ебәреп, бик күп ҡунаҡ йыйҙылар ҙа, ҙур исем туйы яһанылар, ти* (Әкиәттән). **Башҡа етеү** *ҡар.* **баш** 2. **Елеие еткән** мал быҙаулар ваҡыт еткән. **Ир етеү** *ҡар.* **ир. Кем** (*йәки* **ни) етте шул** *ҡар.* **кем. Ҡалай етте шулай** *ҡар.* **ҡалай**[2]. **Ҡайҙа етте шунда** *ҡар.* **ҡайҙа. Минән киткәнсе, эйәһенә еткәнсе** *ҡар.* **мин. Ни етте** *ҡар.* **ни. Ни етә** *ҡар.* **ни.**

● *Сабыр иткән моратына еткән.* Мәҡәл. *Улың етһә, ҡыҙы яҡшы менән ауылдаш бул.* Мәҡәл.

**ЕТЕҮ** [2] *ҡ.* **1.** Оҙонлоҡ йәһәтенән ниндәйҙер самаға килеү. *Арҡан бәйләргә етә.* ■ *Беҙгә эшлә бик оҙон ут сылбыры, .. бер ҡоластай ергә етмәй торһон ул.* Ш. Бабич. *Ҡара ҡытат бишмәтеңә етмәй ҡалған яғалыҡ* (Халыҡ йырынан).

**2.** Һан, күләм йәһәтенән ҡәнәғәтләнерлек, кәрәк саҡлы булыу. *Ашауға етә. Утын ҡышҡа етә. Урын етә.* ■ *[Үмәр:] Яңғыҙ ҡыҙымды кейендерергә генә аҡсам етер әле.* Һ. Дәүләтшина. *Очколары етһә, кәрттәрен ташлап, ауыҙын йомоп, бер аҙ түбән ҡарап тора.* Д. Юлтый.

**3.** Күләм йәһәтенән ниндәйҙер саманы ҡәнәғәтләндереү. *Дарман етеү. Сабыр етеү. Түҙем етеү. Хәл етеү.* ■ *Ҡарт ағастарға йәбешеп ҡалырға ҡулдарымдың көсө етмәне.* Б. Ишемғол.

**4.** Башҡа нәмә талап итмәү, булғаны менән ҡәнәғәтләнерлек булыу.— *Беҙгә һинең ҡулың кәрәкмәй, башың булғас еткән.* Р. Ғабдрахманов.— *Башҡорт булыу өсөн уның һүҙен белеү генә етмәй, ғөрөф-ғәҙәтен, йолаһын белергә кәрәк.* С. Агиш.

**5. етәр, етте** Кемдеңдер эшен, һүҙен туҡтатыр өсөн әйтелә. *[Тимер:] Етте, күп телеңә һалышма!* Б. Бикбай. *Ҡыҙ һикереп тора ла: «Етәр, мин һинеке, егет!» — ти* (Әкиәттән).

**6. етмәгән** Кемдеңдер эш-ҡылығы саманан ашҡанын белдергәндә әйтелә. *[Ҡарағол:] Ишмырҙа кантондың үҙе талағаны, йортто хурлағаны етмәгән, Әпкәләй кеүек шайтан шәүләләрен ебәрә бит.* Д. Юлтый.

♦ **Етмәһә тағы** өҫтәүенә. *Ҡараңғы төштө, етмәһә тағы ямғыр яуа башланы.* **Етә ҡалыу** берәр сәбәптән оторо ҡыҙып киткәндә белдереү өсөн әйтелә. *Исхаков дилбегәһен саҡ ҡына ҡағып ҡуйҙы. Йондоҙға шул етә ҡалды — оса ғына!* Р. Солтангәрәев. **Нимә етмәй** *йәки* **ни етмәне** кешенең самаһыҙ эш-ҡылығына ризаһыҙлыҡ белдергәндә әйтелә.— *Тора башлауҙарына әле генә, уларға ни етмәй, бер-береһен күреп туя алмаҫ ваҡыттары бит?!* М. Ғажи.

● *Аҡыллыға ишара ла етә.* Мәҡәл. *Күңел етһә, аш етә.* Мәҡәл.

**ЕТЕҮ** [3] *ҡ. диал. ҡар.* **етәкләү** 2. *Атты етеп килтерҙеләр.*

**ЕТЕҮ** [4] *с.* **1.** Үҫеп, бала йәшенән сыҡҡан; еткән, ҙурайған. *Етеү ҡыҙ.*

**2.** Саманан артыҡ үҫкән, етек, оҙон (сәс-һаҡал, тырнаҡҡа ҡарата). *Етеү сәс. Етеү һаҡал. Етеү тырнаҡ.*

**ЕТЕШ** *с.* Кәрәк ҡәҙәрле; етерлек, мул. *Етеш тормош. Етеш кеше. Донъяһы етеш. // Етеш донъя көтөү. Етеш йәшәү.* ■ *Барсынһылыуҙың бөтә нәмәһе етеш, тик күңеле урынында түгел, ти.* «Алпамыша». *Янһары мал аҫрап, ете ерҙә йәйләп, биш ерҙә ҡышлап йөрөгән. Ул бик тырыш булған: көн тимәгән, төн тимәгән — эшләгән дә эшләгән. Шуға күрә етеш көн иткән* (Әкиәттән).

**ЕТЕШЕҮ** [1] *ҡ.* **1.** Ҡыуып, килеп етеп өлгөрөү. *Хужа һөрән һалған: «Бур Әхмәтте тиҙерәк тотоң!» — тип. Кем етешһен? Әхмәт киткән юлда ҡалған бары туҙан болото.* Ғ. Сәләм. *Ишкәй сыҡҡас ишектән, .. көсөк килеп етеште, икмәгенә йәбеште.* Х. Ғәбитов.

**2.** Ваҡытында тейешенсә башҡарыу; өлгөрөү. *Мал ҡарауға көтөүселәр генә етешә алмағас, ярҙамға Маянһылыу сыға торғайны, ти.* «Ҡуҙыйкүрпәс менән Маянһылыу». / Ынтылған нәмәгә ирешеү; өлгәшеү. *Теләккә етешеү.* ■ *Егет кенә кеше йөрөгән була етешермен тип уҡ моратҡа* (Халыҡ йырынан).

**3.** Эш-хәлдең бер юғары дәрәжәһенә килеү; барып етеү. *Иларға етешеү. Һуғышыр сиккә етешеү.* ■ *Артист халҡы ғәсәби була. Әҙ генә нәмәгә лә ҡырынлап, талашып, һүгешеп, уның ахыры йоҙроҡлашыуға .. барып етешә.* Д. Юлтый.

**4.** *һөйл.* Табында ултырғанда, ынтылып ашарға алыу. *Етешегеҙ, юлда асыҡҡанһығыҙҙыр.*

**5.** Үҫеп етеү. *Егет булып етешеү.* ■ *Аҡъял ай үҫәһен көн үҫкән, йыл үҫәһен ай үҫкән, ете йәшендә батыр булып етешкән* (Әкиәттән).

**6.** Үҫеп өлгөрөү, бешеү. *Иген етеште.* ■ *[Абызбаева:] Иртәрәк етешә торған сорттарҙы һайлап алырға кәрәк.* Ә. Вәли.

**7.** *һөйл.* Бала табыр көнгә етеү. *Етешеп йөрөү.*

● *Етешкән ете елән кейгән.* Мәҡәл.

**ЕТЕШЕҮ** [2] *ҡ.* Һан, күләм йәһәтенән ҡәнәғәтләнерлек булыу; кәрәк хәтле булыу. *Аҡса етешә. Кеше етешмәй. Тәртип етешмәй. Тәжрибә етешмәй. Уҡыу әсбаптары, китап-дәфтәрҙәр етешмәй.* / Кәрәкле самала булыу; теүәл булыу. *Эйе, ҡанат ҡына етешмәй уға!* З. Биишева. *Байҙың бөтә нәмәһе етешкән, ти: кәртә-ҡураһы бөтөн, йорт-йыһазы шәп, мал-тыуары күп, ти* (Әкиәттән).

**ЕТЕШЛЕ** *с. ҡар.* **етеш.** *Етешле тормошта йәшәү.*

**ЕТЕШТЕРЕЛЕҮ** *ҡ. төш. ҡар.* **етештереү.**

**ЕТЕШТЕРЕҮ** *ҡ.* **1.** Етәрлек күләмдә әҙерләү, етеш итеү; еткереү. *[Булат:] Иген яңыға тиклем етмәҫ кеүегерәк. Әлеге яңғыҙлыҡ шул инде, етештереп булмай.* Б. Бикбай.

**2.** Әҙерләп сығарыу; әҙерләү. *Иген етештереү. Ит етештереү. Йөн етештереү. Һөт етештереү.* / Эшләп сығарыу; эшләү. *Нефть етештереү. Машина етештереү. Полиэтилен етештереү технологияһы.* ■ *Социализм осоронда ижтимағи етештереүҙең иң юғары маҡсаты — кешеләрҙең үҫә барыусы материаль һәм рухи ихтыяждарын мөмкин тиклем тулыраҡ ҡәнәғәтләндереү.* Башҡорт АССР-ының Конституцияһы, 1984.

**3.** Үҫтереп сығарыу; үҫтереү. *Кем булғандыр ергә тыуыр бала: бәлки шағир, бәлки инженер..*

*Бәлки уны Репины итеп етештерер ине беҙҙең ил.* Ғ. Сәләм.

♦ **Етештереү көстәре** материаль байлыҡ етештереүҙә ҡулланылған ҡорал-ҡорамал һәм шул ҡорамал менән эш итеп материаль байлыҡ етештереүсе кешеләр. **Етештереү ҡоралдары** эш һәм етештереү өсөн ҡулланылған бөтә ҡорал-ҡорамал. **Етештереү мөнәсәбәттәре** кешеләрҙең етештереү процесындағы ижтимағи мөнәсәбәттәре.

**ЕТЕШТЕРЕҮСӘНЛЕК** *и.* Билдәле ваҡыт берәмеге эсендә бер эшсе етештергән күләм. **Хеҙмәт етештереүсәнлеге** билдәле бер эш ваҡыты берәмегә итеп алынған ваҡытта эшләп сығарылған кешеләрҙең етештереү, эшләп сығарыу эшмәкәрлегенең продуктлығы. *Хеҙмәтсәндәрҙең .. экономикаға етәкселек итеү формаларын һәм ысулдарын камиллаштыра барып, дәүләт хеҙмәт етештереүсәнлеген үҫтерергә, производствоның эффектлылығын һәм эштең сифатын күтәрергә.* Башҡорт АССР-ының Конституцияһы, 1984.

**ЕТЕШҺЕҘ** *с.* **1.** Тейешле сифат-талаптан түбән; кәмселекле.— *Был минең өсөнсө эшем генә әле. Һеҙ уны маҡтамағыҙ, етешһеҙ яҡтарын күрһәтегеҙ.* Ғ. Ғүмәр.

**2.** Байлыҡ-мөлкәте кәрәк саманан кәм; ҡәнәғәтләнерлек түгел, мохтажлыҡлы. *Етешһеҙ тормош. Етешһеҙ донъя. // Етешһеҙ йәшәү. Көн күреше етешһеҙ.*

**ЕТЕШҺЕҘЛЕК** *и.* **1.** Тейешле сифат-талаптан тайпылған урын; кәмселек. *Етешһеҙлек бар. Етешһеҙлек күп. Етешһеҙлек юҡ. Тәрбиә өлкәһендәге етешһеҙлектәр.* ■ *— Рәхмәт һеҙгә, етешһеҙлектәрҙе ваҡытында күрә һеҙҙең күҙ.* Ғ. Сәләм.

**2.** Етешһеҙ, мохтажлы хәл, ярлы тормош. *Етешһеҙлектән сыға алмау.*

**ЕТЕШӘР** *бүл. һ.* Һәр береһе етенән торған, етегә тиң. *Етешәр кеше. Етешәр алма.*

**ЕТКЕЛЕ** *с. ҡар.* **еткелек.**

**ЕТКЕЛЕК** *с.* Билдәле бер һанға, күләмгә кәрәк ҡәҙәрле; етерлек. *Еткелек аҙыҡ. Еткелек бесән. // Ҡышҡа еткелек итеп утын әҙерләү. Игенде ҡышҡа еткелек тарттырып алыу.*

**ЕТКЕЛЕКЛЕ** *с.* **1.** Һан, күләм йәһәтенән ҡәнәғәтләнерлек; етерлек. *Кәрәк нәмә менән еткелекле итеп тәьмин итмәгәс, эшкә тотҡарлыҡ килә.*

**2.** *ҡар.* **етеш.** *Еткелекле тормош.*

**ЕТКЕРЕЛЕҮ** [1] *ҡ.* **1.** *төш. ҡар.* **еткереү** [1] 2—4, **6.** *Уҡыусыларға кәрәкле китаптар еткерелгән.*

**2.** *эйн. ф. ҡар.* **еткереү** [1] 1, 3—6. *Көтә торғас, яҙҙы ла еткерелде.*

**ЕТКЕРЕЛЕҮ** [2] *ҡ. төш. ҡар.* **еткереү** [2] 2. *Малға бесән еткерелде.*

**ЕТКЕРЕҮ** [1] *ҡ.* **1.** Ҡыуып етергә мөмкинлек биреү. *Кешене еткермәй йүгереү.* ■ *Заятүләк ел еткермәй елдергән, .. сабышып ал бирмәгән, ярышып тиң күрмәгән күк дүнәнде бирәйем.* «Заятүләк менән Һыуһылыу».

**2.** Бер ергә, урынға өлгәштереү. *Ауылға еткереү.* ■ *Ҡайһы бер хаттарҙы [почтальон] эйәһенә еткермәй, кеҫәһенә лә тыға ине, шикелле.* С. Агиш. / Алдан билдәләнгән нәмәгә өлгәштереү, билдәле итеү. *Һүҙ еткереү. Хәбәр еткереү.* / Аңға, күңелгә һеңдереү.— *Һәр һүҙемде кешегә еткереп, аңлайышлы итеп һөйләргә тырышам.*

**3.** Ниндәйҙер бер ваҡытҡа ҡәҙәр түҙеп, шул ваҡытты көтөп алыу. *Кисте еткереү.* ■ *— Ул көндәрҙе тиҙерәк еткереп күрә алһаҡ, бөтә донъяға кем икәнебеҙҙе танытыр инек.* Һ. Дәүләтшина.

**4.** Билдәле бер кимәлгә өлгәштереү. *Һанап, утыҙ өҫкә еткереү.* / Бер юғары дәрәжәгә килтереү. *Сиккә еткереү. Үлемгә еткереү. Һәләкәткә еткереү.* ■ *[Фатима:] Фәғилә бахырҙы бүре бауыр Саҡай ни ҡара көнгә еткерҙе.* Б. Бикбай.

**5.** Бәлиғ булғанса тәрбиәләү, ҙурайтыу. *Ҡыҙҙы еткереп кейәүгә биреү.* **Буй еткереү** буйға үҫеү, ҙурайыу. *Һалдаттар үҙҙәренең тыуып үҫкән ерҙәренә таралышты.., ә беҙҙең кеүек йәшерәктәрҙе буй еткергән ҡыҙҙар көтә ине.* Ғ. Аллаяров. / Үҫтереп, эшкә ашыр мәлгә килтереү; өлгөртөү. *Игенде иҫән-һау еткереп, урып алырға булһын.*

**6.** Оҙон итеп үҫтереү. *Сәс еткереү. Һаҡал еткереү.* ■ *Әрмеләргә барып, сәс еткерҙем, сәскенәйем етте урмәгә* (Халыҡ йырынан).

**7.** *диал. ҡар.* **уңалтыу 1.** *— Кейәү үләне йыйып ҡуйғайным. Бешереп кенә ябырбыҙ. Ул яраны тиҙ еткерә.* Һ. Дәүләтшина.

**8.** Хәл ҡылымдың *-п* формаһындағы һүҙ менән килеп, ҡушма ҡылым яһай: а) хәрәкәттең тамамланғанын белдерә. *Килтереп еткереү.* ■ *Ташты зыяратҡа алып барып еткерҙеләр.* Т. Хәйбуллин; б) нимәнелер ғәмәлгә килтереүҙе белдерә. *Ҡайтыр көндө көтөп еткерә алмау;* в) эш-хәрәкәтте аҙағына тиклем башҡарғанды белдерә. *Итте бешереп еткереү. Ҡайнатып еткереү;* г) *кубр. юкл.* эш-хәрәкәттең һөҙөмтәһен кәметеп күрһәтә. *Аңлап еткермәү. Белеп еткермәү. Уйлап еткермәү.*

♦ **Еренә еткереү** *ҡар.* **ер. Еткерә әйтеү** аңларлыҡ итеп ныҡ әйтеү, ҡаты әйтеү. **Урын-еренә еткереү** *шул уҡ* **еренә еткереү (***ҡар.* **ер).**

● *Тай атҡа, ат моратҡа еткерә.* Мәҡәл. *Төлкө ҡыуҙым — тотторманы, ҡуян ҡыуҙым — еткермәне.* Мәҡәл.

**ЕТКЕРЕҮ** [2] *ҡ.* **1.** Оҙонлоҡ йәһәтенән кәрәк самаға килтереү. *Малай .. ат әҙенә еткерә баҫырға тырышып, эре-эре атлай.* Б. Бикбай.

**2.** Һан, күләм йәһәтенән билдәле бер талапты ҡәнәғәтләндереү, етерлек итеү. *Ашауға еткереү. Бер йылға еткереү. Оҙаҡҡа еткереү. Өй һалырға көс еткереп булмай.*

● *Ир килтерә белһен, ҡатын еткерә белһен.* Әйтем.

**ЕТКӘН** *с.* Буйға үҫеп, бала йәшенән сыҡҡан; ҙурайған; етеү. *Еткән егет. Еткән ҡыҙ.* ■ *Еткән егеткә ни кәрәк? Менеп елер өсөн ат кәрәк тә атыр өсөн уҡ кәрәк. Дәртләндереп тартыр өсөн ҡурай кәрәк тә һөйөр өсөн һылыу ҡыҙ кәрәк.* «Алпамыша».

**ЕТЛЕГЕҮ** *ҡ.* Тейешле үҫеш кимәленә етеү (ҡарындағы балаға ҡарата). *Етлекмәй тыуған бәрәс. Етлекмәй тыуған бала.*

**ЕТЛЕКТЕРЕҮ** *ҡ.* Тейешле үҫеш кимәленә еткереү (ҡарындағы балаға ҡарата).

**ЕТМЕШ** *төп һ.* 70 һыны. / Кем йәки нимәнеңдер 70-кә тиң иҫәбе. *Етмеш кеше. Етмеш йәш. Етмеш килограмм. Етмеш сажрым. Етмеш бер.*

● *Етмештәге лә сабый, етеләге лә сабый.* Мәҡәл.

**ЕТМЕШЕНСЕ** *рәт һ.* Урын тәртибе 70 менән билдәләнгән. *Етмешенсе бүлмә. Етмешенсе өй.*

**ЕТМЕШЛЕК** *и. иҫк.* Боронғо егерме тинлек тәңкә. *Әй ҡоҙаның бүләге, ошо микән күргәне? Етмешлек тип көткән булһаҡ, һуҡыр барнау биргәне* (Туй йырынан).

**ЕТМЕШЛӘП** *сама һ.* Етмеш тирәһе, етмешкә яҡын. *Етмешләп кеше. Етмешләп йәш.*

**ЕТМЕШӘР** *бүл. һ.* Һәр бере етмешкә тиң. *Етмешәр һум.*

**ЕТМӘҺӘ** *инш.* Былай ҙа ярамаған бер эш-хәлгә тағы бер нәмә өҫтәлгәндә белдерә; шуның өҫтөнә, өҫтәүенә. *Күпме ашлыҡ йыйылмай ҡалған! Етмәһә, һаламын өймәй, тегендә-бында этеләп, һөрөргә трактор төшөргәндәр.* Р. Низамов.

**ЕТӘ** [1] *бәйл.* Төбәү килештәге һүҙҙәр менән кем йәки нимәнеңдер артынан булған урынды белдерә; кемгәлер эйәрә; ҡала. *Әнүәргә етә Мөнәүәр тигән улы бар. Мәфрүзәгә етә мин.*

**ЕТӘ** [2] *р. диал.* Бигерәк, үтә. *Төн уртаһы еткәс, бер ҡыҙ илай етә бәхеттәрем юк-юк тип* (Халыҡ йырынан).

**ЕТӘК** *и.* **1.** Ҡулдан йәки теҙген, бау менән тотоп алып барыш, йөрөтөш. *Етәктә барыу. Етәктә йөрөү. Етәккә йөрөү. Етәккә яҡшы йөрөгән ат.* ■ *Ҡарабай етәктәге аттарҙың береһенә Сарыбайҙы мендерә.* «Ҡуҙыйкүрпәс менән Маянһылыу».

**2.** *күсм.* Йүнәлеш биргән эшмәкәрлек; юлбашсылыҡ, етәкселек. *Шәһит ағай! Һинең теләктәреңде башҡорт батрактары Коммунистар партияһы етәгендә урынына еткерәсәк.* Б. Бикбай.

♦ **Етәктә бау өҙмәй йөрөү** кеше ыңғайлы, тыңлаулы булыу.

● *Ҡарты бар өйҙөң китабы бар, китабы бар өйҙөң етәге бар.* Мәҡәл.

**ЕТӘКЛӘТЕҮ** *к.* Етәкләргә ирек биреү. *Етәкләтеп барыу. Малды етәкләтеп ебәреү.*

**ЕТӘКЛӘҮ** *к.* **1.** Кешене ҡулынан тотоп эйәртеү. *Баланы етәкләү. Етәкләп барыу. Етәкләп йөрөү. Етәкләп килтереү. Етәкләп сығарыу.* ■ *Йәнеш асыуланып Емештең ҡулынан һелкетә тартып етәкләп алды ла, ауыл ягына табан атланы.* З. Биишева. / *күсм.* Күңелде әйҙәү, саҡырыу. *Ошо уйҙар уны [Луизаны] урынынан торғоҙоп тағы алға табан етәкләй.* Н. Мусин.

**2.** Малды теҙгененән йәки муйынсағынан тартып эйәртеү. *Һыйырҙы етәкләү. Этте етәкләү.* ■ *Егет аттарҙы етәкләп Мәскәй әбейгә алып барған* (Әкиәттән).

**3.** *күсм.* Йүнәлеш биреп, эйәртеү; етәкселек итеү. *Халыҡты етәкләү.*

**ЕТӘКЛӘШЕҮ** *к.* Ҡулға-ҡул тотоноу. *Етәкләшеп атлау. Етәкләшеп барыу. Етәкләшеп йөрөү. Етәкләшеп китеү.* ■ *Бына бер егет, бер ҡыҙ парлашып, етәкләшеп түңәрәк булып теҙелә башланылар.* Т. Йәнәби. *Бер туғандар булып, илдә үҫте ун биш ҡаһарман.. Улар бара етәкләшеп, туп-тура шул [Ленин ҡуйған] маяҡҡа.* С. Әлибаев.

**ЕТӘКСЕ** *и.* Баш булып, йүнәлеш биреүсе, идара итеүсе; юлбашсы, башлыҡ. *Бригада етәксеһе. Класс етәксеһе. Партия етәксеһе. Район етәксеһе.* ■ *Өйгә инеп ашарға ултырғас та, һаман шул Аҡбаш колхозы етәкселәренең мутлығы тураһында һүҙ барҙы.* Ә. Вәли. *Советтар Союзы Коммунистар партияһы совет йәмғиәтенең етәксе һәм йүнәлеш биреүсе көсө, уның политик системаһының, дәүләт һәм йәмәғәт ойошмаларының ядроһы булып тора.* Башҡорт АССР-ының Конституцияһы, 1984.

● *Алдыңда етәксең, артыңда таянысың булһын.* Әйтем.

**ЕТӘКСЕЛ** *с.* Етәккә яҡшы йөрөүсән. *Етәксел ат.*

**ЕТӘКСЕЛЕК** *и.* **1.** Ойоштороу һәм йүнәлеш биреү эшмәкәрлеге. *Етәкселек эше. // Коллектив етәкселек.*

**2.** Баш булып, идара итеүселәр. *Колхоз етәкселеге. Хужалыҡ етәкселеге.*

□ **Етәкселек итеү** етәксе эшен алып барыу; идара итеү. *Бригадаға етәкселек итеү.*

**ЕТӘЛӘҮ** *к. диал. ҡар.* **етәкләү** 1, 2.

**ЕТӘҮ** *йыйн. һ.* Ете кеше йәки нәмә. *Етәү барҙыҡ. Бөтәһе етәү.* ■ *[Аҡъял батыр батшаға:] Беҙ етәү, ҡыҙың берәү. Шуның өсөн беҙҙең беребеҙ ҙә һинең ҡыҙыңды кәләш итеп алмай* (Әкиәттән).

**ЕТӘҮЛӘП** *р.* Ете кеше бергә. *Етәүләп йөрөү.* ■ *Алты батыр шунда барырға риза булған.. Китеп тә барған былар етәүләп* (Әкиәттән).

**ЕТӘҮЛӘШЕП** *р.* Ете кеше бергәләшеп; етәүләп. *Етәүләшеп эшләү.*

**ЕҮЕШ** *с.* **1.** Һыуланып торған; дымы күп, һыулы. *Еүеш ер. Еүеш кейем. Еүеш ҡул. Еүеш иҙән. Еүеш сәс. Еүеш тупраҡ. Еүеш үлән.* ■ *Ямғырҙа еүеш тимәгән, буранда өшөү белмәгән бына тигән халҡым бар.* Р. Ниғмәти. // *Ул ыңғыраша, һүҙен әйтә алмай. Башын һыйпап ҡараным. Ҡулым еүешкә тейҙе.* Д. Юлтый.

**2.** Дым ҡатнаш; дымлы. *Еүеш һауа.* ■ *Көндөң ҡоро йәки еүеш булыуына ҡарап, барабанды көйләп торорға кәрәк.* «Совет Башҡортостаны», 1965, 26 август.

♦ **Арт яғы еүеш** *ҡар.* **арт. Еүеш танау** *ҡар.* **танау.**

**ЕҮЕШЛЕК** *и.* Еүеш булған хәл. *Һауаның еүешлеге.* ■ *Һәр кемдең йөҙө һытыҡ, шинель арҡыры үтергә өлгөргән ямғыр еүешлеге сиркәндерә.* А. Таһиров.

**ЕҮЕШЛӘНЕҮ** *к.* Еүеш хәлгә килеү. *Өҫ-башы еүешләнгән.* ■ *Мин уның [Фәниәнең] еүешләнгән тәрән күҙҙәренә гәжәпләнеп ҡараным.* Ә. Вәли. *Көн боҙолор булһа, тоҙ еүешләнә, йомшаҡҡа әйләнә, аяҙға табан ҡорой* (Һынамыштан).

**ЕҮЕШЛӘТЕҮ** *к.* Еүешкә әйләндереү; еүешләндереү. *[Нәзирә — Миннурыйға:] Күҙҙәреңде еүешләтмә, яраймы?* Ә. Мирзаһитов.

**ЕҮЕШЛӘҮ** *к.* **1.** Еүеш итеү; һыулау. *Язар ҡурайын алып, тишектәрен теле менән еүешләп, еңел генә бер-ике өрөп ебәрҙе.* Б. Ишемғол. **Та-**

**маҡ еүешләү** *шул уҡ* **тамаҡ ебетеү** (*кар.* **тамаҡ**). *[Капитан:] Йоҡоң килмәһә, сәй йылытып ебәр. Тамаҡ еүешләп алайыҡ.* Ә. Бикчәнтәев.

**2.** Дымға туйындырыу; дымлау. *Һауаны еүешләп, ямғыр еле иҫте.*

**ЕФЕТ** [*фарс.*] *и. иҫк.* Ғаилә иптәше, ише (ир йәки ҡатын). *[Усман:] Бисәкәй, ефетеңде уңыш менән котла!* Н. Иҙелбай. **Хәләл ефет** никахлы ҡатын йәки ир. *Хәләл ефет булыу. Хәләл ефет итеп алыу.* ■ *[Егет:] Былбылым, һин бит хәҙер минең студенткам түгел, ә хәләл ефетем. .. Хәләл ефет — хәләл ҡатын, тигән һүҙ, былбылым.* И. Абдуллин.

**ЕФЕТЛЕК** *и. иҫк.* Кемгәлер ефет, никахлы ҡатын булыу хәле. *Ефетлеккә алыу. Ефетлеккә биреү.* ■ *[Йомағужа:] Йә, туғаным, Гөлйөҙөм, атаң биргән ергә .. Сәйетхужаға хәләл ефетлеккә риза булаһыңмы? — тип һораны.* Һ. Дәүләтшина. *Күсәк батыр: .. биш йыл буйы ҡуй көткән хаҡыңа булһын, шул ҡыҙҙы ефетлеккә бирҙем»,— тине.* «Бабсаҡ менән Күсәк».

**ЕФЕТЛӘНДЕРЕҮ** *к. иҫк.* **1.** Никах менән берләштереү; өйләнештереү.

**2.** Бергә берләштереү. *Көрьәнде фән менән ефетләндерергә теләгән дин ғалимдары, [ә үҙҙәре] «тәкдир» менән фәндең килешә алмау мәсьәләһенә ҡағылмай тауыш-тынһыҙ ғына уҙған да киткәндәр.* И. Насыри.

**ЕФРЕ́ЙТОР** [*рус.* ⟨ *нем.*] *и.* Рядовой һалдатҡа бирелә торған иң беренсе хәрби дәрәжә һәм шул дәрәжәләге кеше. *Ефрейтор булыу. Ефрейтор итеү.* ■ *[Партизан ҡарт:] Лазаретта яттым. Шунан төҙәлеп сыҡҡас, ҡабат фронтҡа оҙаттылар. Аҙаҡтан инде ефрейтор благородие тигән чин куштылар.* М. Тажи.

**ЕФӘК** *и. диал.* Ебәк.

**ЕҺЕР** *и. иҫк.* Яҡлаусыһыҙ, һаҡһыҙ, етем, сараһыҙ кеше. *[Ҡарт:] Көслөнөкө байман тип, еһерҙе сит күрмәҫкә.* «Урал батыр». *Еһер ятҡан бер илде үлйә итәм тип бейгә яуызға юлдаш булмағыҙ.* М. Буранғолов.

# Ж

**Ж** [жэ] Башҡорт алфавитының унынсы хәрефе.

**ЖАБРАИЛ** [*ғәр.*] *и. диал.* Ябраил. *Мин, жабраилы килгән пәйғәмбәр кеүек, рухани ҡаушап киттем, [ҡыҙҙың] балҡып торған йөҙөнә йотлоғоп ҡараным да, ҡулын ҡулыма алдым.* М. Ғафури.

**ЖАҘИБӘЛЕ** [*ғәр.*] *с. иҫк. кит.* Кешенең күңелен үҙенә тарта торған, һөйкөмлө. *Хәнифтең йәш күңелен жаҙибәле Әминә үҙенә бәйләгән.* Ф. Вәлиев.

**ЖАЙ** [*фарс.*] *и. иҫк.* Урын, ер. *Үтер бәғзе мосолман тая-тая, етер урын тигән ғәшрәтле жая.* М. Ғафури.

**ЖАЙРАН** *и. кар.* **йәйрән.**

**ЖАКА́Н** [*рус.* ⟨ *лит.*] *и. һейл.* Эре йәнлеккә ата торған ҡурғаш йәҙрә; айыу йәҙрәһе. *Йоклар алдынан ул [Булат], мылтығыңды ни менән ҡорҙоң, тип һорарға ла онотманы. Жакан менән, әлбиттә.* З. Яматов.

**ЖАКЕ́Т** [*рус.* ⟨ *фр.*] *и.* Ҡатын-ҡыҙҙарҙың ҡыҫҡа өҫ кейеме. *Ишектә урта буйлы .. ир күренде. Уға каракүл яғалы жакет кейгән Ғәйшә эйәргән.* Д. Юлтый.

**ЖА́ЛОБА** *и. кар.* **ялыу.** *Жалоба яҙыу.*

**ЖА́ЛОВАНЬЕ** [*рус.*]. *и. шул уҡ* **эш хаҡы** (*кар.* **хаҡ**). *Ошо араларҙа жалованье алам да самауыр, сынаяҡ, күнәк, суместәр .. алам.* Т. Йәнәби.

**ЖАМ** [*фарс.*] *и. иҫк. кит.* Туҫтаҡ. *Мөхәббәт жамын эсеп шәһадәт нуры менән мөнәүүәр булған ғазилар хөрмәтенә.* М. Өмөтбаев.

**ЖАМАЯҠ** *и. кар.* **жам.**

**ЖАМӘ** [*фарс.*] *и. иҫк. кит.* Өҫ кейеме, кейем. *Жамәһе көһнә булғанга бәд гөман мәтлуб имәс.* Аҡмулла. *Ғәжәптер был заман халҡы, кейерҙәр жамә, дәлки .. арынмаҫтар залимдарҙан* (Мөнәжәттән).

**ЖАНАН** *и. иҫк. кит. кар.* **йәнәш**[1]. *Кемдең выжданы юк — жананы юкдыр, кемдең жананы юк — жаны юкдыр.* Аҡмулла.

**ЖАНДА́РМ** [*рус.* ⟨ *фр.*] *и.* Жандармерияла хеҙмәт иткән кеше. *Бер жандарм йүгереп килде лә, вагондың ишек тотҡаһына йәбешкән һалдаттарҙы тартып төшөрә, .. ҡылыс ҡыны менән һуға башланы.* А. Таһиров.

**ЖАНДАРМЕ́РИЯ** [*рус.* ⟨ *фр.*] *и.* Феодаль һәм буржуаз илдәрҙәге революцион хәрәкәткә ҡаршы көрәшеү, политик һаҡ һәм революционерҙарҙы эҙәрлекләү өсөн хеҙмәт иткән махсус полиция ғәскәре. *Жандармерия башлығы. Жандармерия корпусы.* ■ *.. Царизмдың иң ҙур арҡа таяныстарының береһе — жандармерия булһа, икенсеһе — диндәр ине.* И. Насыри.

**ЖАНИБ** [*ғәр.*] *и. иҫк. кит.* Яҡ, тараф. *Падишаһыбыҙ жанибында беҙҙәргә мәрхәмәттәр ирешеп,.. сәләмәттә булырбыҙ, тип [әйтеүебеҙ].* «Батыршаның хаты».

**ЖАНР** [*рус.* ⟨ *фр.*] *и.* Әҙәбиәт һәм сәнғәттәге үҙенә бер төрлө сюжет һәм стилистик үҙенсәлек менән билдәләнгән әҫәрҙәр төрө. *Роман жанры. Комедия жанры. Портрет жанры. Жанрҙар төрлөлөгө.* ■ *Башҡорт совет поэзияһының нигеҙе лирик шиғырҙа, ул поэзияның иң боронғо жанры.* Р. Бикбаев. *Сеңләү — башҡорт йола фольклорының үҙенсәлекле бер жанры.* М. Сәғитов.

**ЖАРГО́Н** [*рус.* ⟨ *фр.*] *и.* Бер һөнәр йәки социаль төркөм кешеләре ҡулланған, лексикаһы менән әҙәби норманан айырылып торған үҙенсәлекле тел. *Жаргон һүҙҙәре.*

**ЖАРИЯ** [*ғәр.*] *и. иҫк. кит. кар.* **йәриә 2.**

**ЖАСУС** [*ғәр.*] *и. иҫк. кит.* Ясус. *Һаҡланыбыраҡ эш итегеҙ, берәр насар хәл булмаһын, беҙҙең күршелә жасусҡа оҡшаған бер кеше бар, һаҡлана күрегеҙ, балаҡайҙар!* Б. Мирзанов.

**ЖАФИ** [*ғәр.*] *с. иҫк. кит.* Ҡаты бәғерле, бәғерһеҙ; яфалаусы.

**ЖАҺ** [*фарс.*] *и. иҫк. кит.* Дәрәжә, абруй. *Әгәр бирһәң бер залимға ихтыярлыҡ золом менән жаһ, дәүләт ҡулға керһә, һәр кешегә берәр төрлө зарар итер.* М. Ғафури.

**ЖАҺИЛ** [*ғәр.*] *с. диал.* Яһил. *Жаһил булыу.*

**ЖАҺИЛАНӘ** [*гәр.* ⟨ *фарс.*] *р. иҫк. кит.* Наҙандарса, аңһыҙ рәүештә. *Жаһиланә фекерҙә булыу.*

**ЖАҺИЛИӘ** [*гәр.*] *и. иҫк. кит.* Белемһеҙлек, томаналыҡ, наҙанлыҡ, аңһыҙлыҡ. *Жаһилиәткә гүйә кәрҙәше батмышта үҙе хайран.* С. Яҡшығолов. *Р. Фәхретдинов жаһилиәттән котолоуҙың түбәндәге шарттарын күрһәтә: «.. Һәр ауылда ирҙәр һәм ҡыҙҙар .. мәктәбе асыу ..* Ә. Харисов.

**ЖГУТ** [*рус.*] *и.* **1.** Яраның ҡанын ваҡытлыса туҡтатыу өсөн аяҡ-ҡулды быуа торған бау. *Жгут ҡулланыу. Жгут һалыу.*

**2.** *кар.* **бау** 1.

**ЖЕЙӘН** *и. диал.* Ейән. *Жейән ҡыҙ. Жейән ул.*

**ЖЕЛАТИ́Н** [*рус.* ⟨ *фр.*] *и.* Хайуан тиреһе йәки һөйәгенән әҙерләнә торған ҡойҡа һымаҡ аҡһым матдә (техникала, кулинарияла, медицинала, фотографияла ҡулланыла).

**ЖЕЛЕ́** [*рус.* ⟨ *фр.*] *и.* **1.** Емеш һутына, һөткә йәки шарапҡа желатин ҡушып яһаған кеҫәл һымаҡ татлы ашамлыҡ.

**2.** Ит йәки балыҡ өҫтөнә ҡойған ҡойҡа.

**ЖЕНЬШЕ́НЬ** [*рус.* ⟨ *ҡыт.*] *и.* Тамыры медицинала ҡулланыла торған Алыҫ Көнсығыш үҫемлеге. *Женьшень тамыры. Женьшень менән дауаланыу.* ■ *Женьшенде «йәшәү тамыры» тип йөрөтәләр. Ул күп йыллыҡ үҫемлек.* «Башҡортостан ҡыҙы», 1985, № 7.

**ЖЕТО́Н** [*рус.* ⟨ *фр.*] *и.* **1.** Ниндәйҙер ойошманың ағзаһы икәнде билдәләп һәм берәй ваҡиғаның иҫтәлегенә йәки ярышта еңеүсегә бүләк итеп бирелә торған ҡалай значок (йәки медаль төрө). *Жетон тапшырыу.* ■ *Егеттең күкрәгенә күҙҙең яуын алып торған жетон таҡтылар. Унда «Башҡортостан чемпионы. 1966 йыл» тип яҙылған.* Т. Килмөхәмәтов.

**2.** Шартлы билдә булған йәки нимәгәлер хоҡуҡ биргән металл киҫәге. *Шулай булырмын тип башҡа килтергәнем юҡ гүмере мин. Гардеробщик ағай өсөн жетондағы бер номер мин.* М. Каримов.

**ЖИ́ВОПИСЬ** [*рус.*] *и.* **1.** Ысынбарлыҡтағы төрлө күренеш һәм предметтарҙы буяуҙар менән һүрәтләй торған һынлы сәнғәт төрө. *Живопись менән шөғөлләнеү.* ■ *[К. Дәүләткилдеев башҡорт һынлы сәнғәтендә] портрет живописына нигеҙ һалды.* «Башҡортостан уҡытыусыһы», 1967, № 3.

**2.** Ошо сәнғәт төрөнөң әҫәре (картина, фреска һ. б.). *Күргәҙмәлә пролетар революцияһы юлбашсыһының образын кәүҙәләндергән иң яҡшы живопись, графика һәм скульптура әҫәрҙәре бар.* «Совет Башҡортостаны», 1968, 24 ғинуар.

**ЖИГА́Н** [*рус.*] *и. һөйл.* Алдашып, урлашып йөрөгән кеше.— *Әллә толчокка сығып, жиган булып, кеҫәгә төшөп йөрөрһөңмө?* С. Агиш.

**ЖИЛД** [*гәр.*] *и. иҫк. кит.* **1.** Китап тышы.

**2.** Китаптың бер данаһы йәки бер томы. *Ҡалын бер жилд [Аҡмулланың] үҙ шиғырҙарының вә башҡа ваҡиғаларҙың мөсәүүәдәләренән ғибәрәт икәнлеге мәғлүм булды.* Р. Фәхретдинов.

**ЖИЛЕ́Т** [*рус.* ⟨ *фр.*] *и.* Ирҙәр пинжәк эсенән кейә торған еңһеҙ, яғаһыҙ ҡыҫҡа кейем. *[Ғимрановтың] гәжәп килешле жилет кеҫәһенән көмөш сәғәт сылбыры .. күренеп тора.* З. Биишева. / Камзул һымаҡ еңһеҙ өҫ кейеме. *Ҡатын-ҡыҙҙар жилеты. Жилет кейеү.*

**ЖИРА́Ф** [*рус.* ⟨ *гәр.*] *и.* Оҙон муйынлы, оҙон аяҡлы сыбар төҫтәге хайуан (Африкала йәшәй).

**ЖИСЕМ** [*гәр.*] *и. иҫк. кит.* Есем. *Мең мәртәбә артыҡ булыр ине һокланыуҙан сонға жисеменә.* Т. Йәнәби.

**ЖИСМАНИ** [*гәр.*] *с. иҫк. кит.* Есем сифатындағы, есми; физик. *Жисмани көс менән аҡыл көсөн бергә егеп алға ҡыуабыҙ.* Ғ. Хәйри. *Улар [палачтар] рухани ҙа, жисмани ҙа үлгәндәр.* Ш. Фидаи.

**ЖИҺАН** *и. иҫк. кит.* Йыһан.

**ЖИҺАТ** *и. иҫк. кит.* Йыһат. *Бына тағы бер яңы йыр!.. Был булыр иң ахырғы иң ҡаты, ҙур жиһат.* З. Биишева.

**ЖМЫХ** [*рус.*]. *и.* Майлы үҫемлектәрҙең орлоғонан май һығып алғас ҡалған һығынды. *Жмых ваҡлағыс. Көнбағыш жмыхы.*

**ЖНЕ́ЙКА** [*рус.*] *и. кар.* **Урғыс.**

**ЖОКЕ́Й** [*рус.* ⟨ *ингл.*] *и. спорт.* Ат ярышында ҡатнашҡан кеше (арба егелгән ат менән йәки һыбай).

**ЖОКҺОҘ** *с. диал.* Һөймәлекһеҙ, һөйкөмһөҙ.

**ЖОМ** [*рус.*] *и.* **1.** *кар.* **һыҡҡыс.**

**2.** Сөгөлдөрҙән ҡалған һығынды (мал аҙығы итеп ҡулланыла). *Жом һаҡлағыс. Малға жом ашатыу.*

**ЖОНГЛЁР** [*рус.* ⟨ *фр.* ⟨ *лат.*] *и.* Бер нисә нәмәне бер юлы оҫта ырғытып һәм тотоп алып уйнатҡан цирк артисы. *Жонглёр булыу.*

**ЖОҢКОУ** *с. диал.* Ығыш, мыштыр.

**ЖОТ** *и. диал.* Ҡомһоҙ, һаран.

**ЖӨББӘ** *и. иҫк.* Йөббә. *Башына эшләпә, өҫтөнә жөббә һымаҡ кейем кейгән .. һаҡаллы кеше мәсеттән сығып ҡырандасҡа ултырҙы.* Д. Юлтый. *[Зәйнәптең] күңелендә бик матур фәс менән жөббә кейгән оҙон буйлы, .. ҡара ҡашлы .. бер һүрәт урынлашҡан.* М. Ғафури.

**ЖӨҒАЛӘ** [*гәр.*] *и. иҫк. кит.* Бүләк, хаҡ.

**ЖӨДӘ** [*фарс.*]: **жөдә булыу** *иҫк. кит.* айырылыу, айырылышыу, айырылыуға дусар булыу. *Һайрамаҫ былбыл да, булһа гөлстандан жөдә.* Аҡмулла.

**ЖӨЗЬИ** [*гәр.*] *с. иҫк. кит.* Бик аҙ, бик бәләкәй, остоҡ ҡына. *Тор урыныңдан, ҡыймылда, ынтыл, алға бар, ҡулыңда бар бит һинең бер жөзьи ихтыяр.* С. Яҡшығолов.

**ЖӨЗЬӘ** [*гәр.*] *и. иҫк. кит.* Өлөш, киҫәк. *Берәй нәҫерле китаптың жөзьәнән ятҡа яҙырға.* М. Өмөтбаев.

**ЖӨЗӘМ** [*гәр.*] *и. иҫк. кит.* Махау.

**ЖӨМАДИӘЛАХЫР** [*гәр.*] *и. иҫк. кит.* Йомадиәлахыр.

**ЖӨМАДИӘЛӘҮҮӘЛ** [*гәр.*] *и. иҫк. кит.* Йомадиәләүүәл.

**ЖӨНД** [*гәр.*] *иҫк. кит.* Ғәскәр.

**ЖӨНУД** [*гәр.*] *и. иҫк. кит.* Ғәскәрҙәр. *Жөнуд шаятинды тәржих ҡылып, унан һуң беҙҙе хоҙай ормаҡ кәрәк.* Аҡмулла.

**ЖӨРЬӘТ** [*гәр.*] *и. кар.* **йөрьәт.** *Башҡалар ҙа уйлай уны, тик әйтергә жөрьәттәре етмәй.* С. Агиш.

**ЖРЕЦ** [*рус.*] *и.* Мәжүсиҙәрҙең дин башлығы, мәжүси йолаларын атҡарыусы. *Мысыр жрец-*

тары. ■. *Утка табыныуҙың үҙәге Азербайжанда булған. Бында «мәңгелек уттар» янына Һиндостан жрецтары храмдар төҙөгән.* Д. Бураҡаев.

**ЖУЙКАНҺЫҘ** *с. диал.* Тәртипһеҙ, тыңлауһыҙ.

**ЖУ́ЛИК** [*рус.*] *и. һөйл.* **1.** Уғыры, бур.

**2.** Алдаҡсы, хәйләкәр, мут. *Ул жуликтар эште яйға короп алған: берeһе урлай, берeһе яҡлай, берeһе алдай.* Ш. Биҡкол.

**ЖУҢҒАР** [*рус.* джунгар ⟨ *монг.*] *и. тар.* **1.** 17 быуаттағы Ойрат ханлығының хөкүмәт башындағы кенәздәр төркөмө.

**2.** Ҡалмыҡтарҙың 17—18 быуаттарҙағы атамаһы.

**ЖУРНА́Л** [*рус.* ⟨ *фр.*] *и.* **1.** Китап һымаҡ итеп сығарылған ваҡытлы баҫма. *Айлыҡ журнал. Балалар журналы. Әҙәби журнал. Журнал сығарыу.* ■ *1927 йылда «Сәсән» исемле әҙәби журнал сығарыла башлай.* З. Шәрҡи.

**2.** Көндәлек хәлде теркәп бара торған ҡалын дәфтәр. *Вахта журналы. Класс журналы. Журналға яҙып барыу.* ■ *Сәгиҙә тулҡынланыуынан класс журналын алырға ла онотто. Уҡытыусылар бүлмәһенән сыҡҡас кире боролдо.* М. Тажи.

**ЖУРНАЛИ́СТ** [*рус.* ⟨ *фр.*] *и.* Журналистика менән шөғөлләнгән профессиональ хеҙмәткәр. *Сит ил журналистары. Журналистар йорто. Журналистар союзы. Журналист булыу.* ■ *Рабиға Ҡушаева һәләтле журналист була. Ул .. «Башҡортостан хәбәрҙәре» газетаһында йыш ҡына төрлө мәҡәләләр менән сығыш яһай.* М. Ғибаҙуллин.

**ЖУРНАЛИ́СТИКА** [*рус.*] *и.* **1.** Газета, журнал, радио һәм телевидениелағы әҙәби-публицистик эшмәкәрлек. *Газета, журналистика мине тормош менән яҡындан таныштырҙы. Хәбәрсе кеше ҡайҙа ғына булмай, ниндәй генә кешеләр менән осрашмай һуң!* Ш. Насыров.

**2.** *йыйн.* Бөтә булған ваҡытлы баҫма. *Совет журналистикаһы.*

**ЖҮНКЕҮ** *к. диал.* **1.** *кар.* **йүнкеү**[1].

**2.** Кеше һүҙенә, кеше ыңғайына ауыу.

**ЖЫБАУ** *р. диал.* Булдыҡһыҙ, ығыш.

**ЖЫЖ** *оҡш.* Бөжәктәр осҡанда, көслө ел өргәндә һәм төрлө механизмдар ҙур тиҙлек менән хәрәкәт иткәндә сыҡҡан тауышты белдергән һүҙ. *Жыж итеп тороу.*

**ЖЫЖ-ЖЫЖ** *оҡш.* Дауамлы жыж иткән тауышты белдергән һүҙ. *Жыж-жыж килә бал ҡорто; килдем, ти, бында эшкә.* Ф. Рәхимғолова.

**ЖЫЖЛАТЫУ** *к. йөкм. кар.* **жыжлау.** *Тәгәрмәсте жыжлатып әйләндереү.*

**ЖЫЖЛАУ** *к.* Жыж-жыж итеү. *Жыжлап осоу. Жыжлап тороу.* ■ *[Әсә:] Күкрәмәгеҙ туптар, жыжламағыҙ уҡтар, балам йоҡламай.* С. Ҡудаш.

**ЖЫЖЛАШЫУ** *к. урт. кар.* **жыжлау.** *Жыжлашып осоу.*

**ЖЫЙ** *оҡш.* Пуля һ. б. нәмә ҡапыл осоп үткәндә, тиҙ хәрәкәт иткәндә сыҡҡан тауышты белдергән һүҙ; зый. *Бал ҡорттары .. жый итеп ҡарттың танауы эргәһенән атылып үтеп китә.* Й. Солтанов.

**ЖЫЙ-ЖЫЙ** *оҡш.* Ҡабат-ҡабат жый иткән тауышты белдергән һүҙ; зый-зый.

**ЖЫЙЛАТЫУ** *к.* **1.** Жый иттереү.

**2.** *күсм.* Бик ҙур тиҙлектә хәрәкәт итеү. *Төнгө поезға ултырып, иртән иртүк Стәрлетамаҡҡа жыйлатып килеп тә төштөм.* Ф. Исәнғолов.

**ЖЫЙЛАУ** *к.* **1.** Жый итеү. *Снарядтар түбәндән, эргәнән жыйлап үтеп кенә тора.* С. Әлибаев.

**2.** *күсм.* Бик ҙур тиҙлектә хәрәкәт итеү. *[Салих:] Әлдә машинаға ултырманыҡ, бер ни күрмәй жыйлап үтер ҙә китер инек.* С. Агиш.

**ЖЫЙЛАШЫУ** *к. урт. кар.* **жыйлау.** *Жыйлашып осоу.*

**ЖЫЙТ** *оҡш.* Эргәнән ҡапыл елеп үткән нәмә хәрәкәтен белдергән һүҙ. *Жыйт итеп ҡалыу.* ■ *Дилбегәһен бушатып алыуы була, шуны ғына көткән айғыр жыйт итеп кенә ҡала.* Р. Солтангәрәев.

**ЖЫЙТ-ЖЫЙТ** *оҡш.* Ҡапыл-ҡапыл жыйт иткән хәрәкәтте белдергән һүҙ. *Ун алты ракета, ҡойроғонан ут көлтәһе бырғып, .. жыйт-жыйт итеп оса ғына, ти.* Й. Солтанов.

**ЖЫЙЫЛДАУ** *к.* **1.** Жый-жый итеү, жый-жый килеү. *Жыйылдап тороу. Снаряд ярсыҡтары тирә-яҡҡа жыйылдап төшә.*

**2.** *күсм.* Ҙур тиҙлектә хәрәкәт итеү. *Жыйылдап үтеп торған автобустарға ҡулдар һуҙыла.* А. Ғирфанов.

**ЖЫЙЫНҺЫҘ** *с. диал.* Йыйынаҡһыҙ.

**ЖЫЛЫЙ** *и. диал.* Серетке.

**ЖЫЛЫУ** *к. диал.* Шыуыу.

**ЖЫУ** *оҡш.* Етеҙ хәрәкәтте, көслө ел тауышын белдергән һүҙ; жыж. *Ыласын бик алыҫтан күҙ һала; килде, типте жыу итеп, өйрәк уны белмәй ҡала.* М. Ғафури.

♦ **Йөрәк жыу итеү** ҡапыл ныҡ ҡурҡыу. *— Стой! Туҡта! ..— тине командир. Беҙҙең йөрәктәр жыу итеп ҡалды.* Ғ. Ғүмәр.

**ЖЫУ-ЖЫУ** *оҡш.* Ҡабат-ҡабат жыу иткән тауышты белдергән һүҙ. *Таң алдынан жыу-жыу килеп ниндәйҙер көлтә-көлтә ут осорға тотон[до].* Н. Иҙелбаев.

**ЖЫУЛАУ** *к.* Жыу итеү, жыу килеү. *Ел жыулай, ҡар туҙҙыра.* Д. Юлтый.

**ЖЫУЫЛДАТЫУ** *к.* Жыу-жыу иттереү, жыу-жыу килеү. *Жыуылдатып әйләндереү.*

**ЖЫУЫЛДАУ** *к.* **1.** Жыу-жыу итеү. *Жыуылдап әйләнеү.*

**2.** *күсм.* Ҡурҡып өлпөлдәү (йөрәккә ҡарата). *Иршаттың йөрәге жыуылдап китте, аяҡ бармаҡтарына тиклем эҫелек йүгереп үтте.* К. Мәргән.

**ЖӘББАР** [*ғәр.*] *с. иҫк. кит.* **1.** Бик ҡеүәтле, ҙур көскә эйә булған. *Әүәлдәрем иҫемдә ине, был иҫемдә юк, каза етһә бирә икән жәббар хоҙай.* Аҡмулла.

**2.** *и. мәғ.* Алла. *Аҙҙырырмын доньяны, бел, жәббарым.* Ш. Бабич.

**ЖӘБЕР** [*ғәр.*] *и. иҫк. кит.* **1.** Йәбер.

**2.** Алгебра. *Жәбер дәресе.*

**ЖӘБРӘН** [*ғәр.*] *р. иҫк. кит.* Ирекһеҙләп, көсләп. *Бармаһаң, жәбрән бирербеҙ.* Аҡмулла.

**ЖӘБӘЛ** [*ғәр.*] *и. иҫк. кит.* Тау. *Жәбәл дек ғәйеп күрһә, телгә алмаҫ.* Һ. Сәлихов.

**ЖӘҒЛИ** [*ғәр.*] *с. иҫк. кит.* Яһалма, уйҙырма. *Өймә хистәр, мең яһалма, жәгли көстәр кәүҙәләп.* Д. Юлтый.

**ЖӘДИ** [*ғәр.*] *и.* **1.** *(баш хәреф менән) астр.* Ун ике бөрөждөң бере (Кәүес менән Дәлү бөрөждәре уртаһында урынлашҡан).

**2.** Ҡояш календары буйынса унынсы айҙың ғәрәпсә исеме (22 октябрь — 21 ноябрь ваҡытына тура килә; *ҡар.* **календарь**).

**ЖӘДИДӘ** [*ғәр.*] *и.* *ҡар.* **йәдитселек.**

**ЖӘДӘЛ** [*ғәр.*] *и.* *иҫк.* *кит.* Бәхәс. *Жәдәл, янъял, хөсөт, кенә тоташҡан. Байы фәҡиргә, фәҡире байға дошман.* С. Яҡшығолов.

**ЖӘИЗ** [*ғәр.*] *с.* *иҫк.* *кит.* Мөмкин булған яраҡлы. *Жәиз булыу.*

**ЖӘЙӘЛЕК** *и.* *диал.* Йүргәк.

**ЖӘЛЛӘД** [*ғәр.*] *и.* *иҫк.* *кит.* Йәлләт. *Мәңгелеккә юҡҡа сыкһын залим жәлләд ҡылысы!* С. Рәхмәтуллин. *Ҡан эсеүсе жәлләд буржуйҙарға, үлем яҡын һеҙгә, тиерһеҙ.* Ғ. Мәсғүд.

**ЖӘЛӘЛ** [*ғәр.*] *и.* *иҫк.* *кит.* Бөйөклөк. *Уҡығанға был донъяла жәләл булыр, харам тигән күп нәмәләр хәләл булыр.* Аҡмулла.

♦ **Мулла жәләл** боронғо китап исеме. *Һеҙ бикәр бер муллаһыҙ ултырмағыҙ. Ул мулланың ҡираәте яҡшы булһын, күргән тип «Мулла жәләл» котормағыҙ.* Аҡмулла.

**ЖӘМАЛ** [*ғәр.*] *с.* *иҫк.* *кит.* *ҡар.* **ямал** 1. *Жәдидәи замандан жәмал асып күрһәтте аҡ гәйрәтен яңғыҙ был ир.* Аҡмулла.

**ЖӘМИҒ** [*ғәр.*] *с.* *иҫк.* *кит.* Йәмиғ. *Жәмиг өммәттәренә сәләмәт вә рәхмәт булһын.* М. Өмөтбаев.

**ЖӘМӘҒӘТ** [*ғәр.*] *и.* *иҫк.* *кит.* Йәмәғәт.

**ЖӘНК** [*фарс.*] *и.* *иҫк.* *кит.* Һуғыш, бәрелеш. *Нуғай юлы башҡорттары жәнк ҡоралдары төҙөйҙәр.* «Батыршаның хаты».

**ЖӘННӘТ** *и.* *иҫк.* *кит.* Йәннәт.

**ЖӘРЕХ** [*ғәр.*] *с.* *иҫк.* *кит.* Яра һалғыс, хур иткес, рәнйеткес.

□ **Жәрех ҡылыу** яралау, рәнйетеү. *Ғәҙәте йә мыҫҡыллау йәки хурлау, һүҙ һөйләмәҫ берәүҙе жәрех ҡылмай.* Аҡмулла.

**ЖӘРИДӘ** *и.* *иҫк.* *кит.* Газета. *Күп дошмандар араһында әҙ мосолман .. Быларҙың мазлум булған хәле илә жәридәләр тулы була..* М. Ғафури.

**ЖӘСАРӘТ** [*ғәр.*] *и.* *иҫк.* *кит.* Йәсарәт. *Жәсарәт биреү. Жәсарәт алыу.*

**ЖӘСАРӘТЛӘНЕҮ** *к.* *иҫк.* *кит.* Йәсарәтләнеү.

**ЖӘСӘД** [*ғәр.*] *и.* *иҫк.* *кит.* Кәүҙә. *Бөйөк даһиҙың жәсәде мәңгегә махсус мавзолейға керетеп ҡуйыла.* И. Насыри.

**ЖӘУАЗ** [*ғәр.*] *и.* Мөмкинлек, рөхсәт. *Шариғтың сөкүтенән жәуаз мөфад.* Аҡмулла.

**ЖӘҮЗӘ** [*ғәр.*] *и.* **1.** *(баш хәреф менән) астр.* Ун ике бөрөждөң бере (Сәүер менән Саратан бөрөждәре уртаһында урынлашҡан).

**2.** Ҡояш календары буйынса өсөнсө айҙың ғәрәпсә исеме (22 май — 21 июнь ваҡытына тура килә; *ҡар.* **календарь**). *Жәүзә башында кәкүк ҡысҡыра.* ■ *Күҙгалыш .. жәүзәнең ахыр көндәренә тәгәйенләнә.* Ғ. Ибраһимов. *Атабыҙ .. Ялсығол .. донъянан үтте алтмыш йәшендә, рәжәп айында, жәүзәнең егерме алтынсы яумендә.* «Башҡорт шәжәрәләре», 1960.

● *Аҡыҡ — йөҙөк ҡашы, жәүзә — яҙҙың башы.* Әйтем.

**ЖӘҮӘЛАН** [*ғәр.*] *и.* *иҫк* *кит.* Сәйәхәт, сәфәр.

□ **Жәүәлан итеү** (*йәки* **ҡылыу**) ил гиҙеү, сәйәхәт итеү. *[Аҡмулла] хәйли мөддәт жәүәлан итмештер, һис бер ваҡыт асыл ватанына гәүдәт итмәмештер.* Ғ. Барый. *Һәр бер сәйран ҡылыр сәбиләндә былбылдар жәүәлан ҡылыр сәрирендә.* Аҡмулла.

**ЖӘҺЕД** [*ғәр.*] *и.* *иҫк.* *кит.* Йәһед. *Үҙебеҙ күрмәһәк жәһеден, туғандар, кеше өсөн ҡайғырыу аҙҙыр, тигәндәр.* М. Өмөтбаев.

□ **Жәһед ҡылыу** тырышыу.

**ЖЮРИ́** [*рус.* ⟨ *фр.*] *и.* Ярыш һәм күргәҙмәләрҙә кем нисәнсе урынды алғанын билдәләү өсөн ҡуйылған белгестәр төркөмө. *Конкурс жюрийы. Жюри ағзаһы.* ■ *«Урал» колхозы йәштәренең сығышы жюри тарафынан юғары баһаланды.* «Совет Башҡортостаны», 1985, 11 ғинуар.

# З

**З** [зә] Башҡорт алфавитының ун беренсе хәрефе.

**ЗАБАСТО́ВКА** [*рус.*] *и.* Күмәк эшсенең ойошҡан рәүештә эш туҡтатыуы; стачка. *Забастовка хәрәкәте. Забастовка яһау.* ■ *Забастовка! Шаулай урамдар, ҡара ҡулдар ҡорал алалар. Тау-таштарҙы ватҡан көслө ҡулдар буржуаның ишеген ҡағалар.* Б. Ишемғол.

**ЗАБАСТОВКАСЫ** *и.* Забастовкала ҡатнашҡан кеше. *Забастовкасылар пикеты.*

**ЗАБО́Й** [*рус.*] *и.* Шахтала күмер, руда һ. б. ҡаҙығанда артабан соҡолоп инә барған урын (шахта эшсеһенең эш урыны). *Забой механизмы. Забой сабыу.* ■ *Тәрән шахталарҙа забой ҡаҙып, алтын эҙләп алға китәләр.* Ә. Салих. *Борма-борма забой төптәре, бормаларҙан уҙа вагондар.* Х. Ғиләжев.

**ЗАБОЙСЫ** *и.* Забойҙа эшләгән кеше; забойщик. *Забойсылар забой саба, [саба] ҡаты күмерҙе.* М. Сөндөклө.

**ЗАБО́ЙЩИК** [*рус.*] *и.* *ҡар.* **забойсы.**

**ЗАВАЛКА** [*рус.* завалочный]: **завалка машинаһы** *махс.* мартен, домна мейестәренә шихта тултыра торған машина.

**ЗАВКО́М** [*рус.*] *и.* Профсоюз ойошмаһының завод комитеты. *Завком ағзаһы. Завком председателе. Завком ултырышы.* / Шул комитеттың ултырышы. *Ғаризаны завкомда ҡарау. Эште завкомға ҡуйыу.*

**ЗАВО́Д** [*рус.*] *и.* **1.** Промышленность һәм эре промысла хужалығы. *Завод директоры. Завод идараһы. Завод хужаһы. Автомобиль заводы. Кирбес заводы. Мотор заводы.* ■ *Ҡыҫҡа ғына ваҡыт эсендә Урал тауҙары төпкөлөндә бер төркөм заводтар үҫеп сыға.* М. Хисмәтов.

**2.** Тоҡомло йылҡы йәки ҡиммәтле балыҡ үрсетә торған хужалыҡ. *Йылҡысылыҡ заводы. Балыҡсылыҡ заводы.*

**ЗАВОДСЫ** *и.* *иҫк.* Завод хужаһы. *Урал заводсылары.* ■ *Шул көндө үк заводсы Камалетдинды эштән ҡыуҙы. Һуңынан «боласы»ны бер кем дә эшкә алырға теләмәне.* Ә. Әхмәткужин.

**ЗАВО́ДЧИК** *и.* *ҡар.* **заводсы.**

**ЗА́ВУЧ** [*рус.*] *и.* Мәктәптәге уҡыу-уҡытыу бүлегенең мөдире. *Уҡыу эше буйынса завуч. Тәрбиә эше буйынса завуч.*

**ЗАВФЕ́РМА** *и. һөйл.* Ферма (1 мәғ.) мөдире.

**ЗАВХО́З** [*рус.*] *и. һөйл.* Хужалыҡ (4 мәғ.) мөдире. *Мәктәп завхозы.*

**ЗА́ГОВОР** [*рус.*] *и.* Бер төркөм кешеиең билдәле бер маҡсат менән кем йәки нимәгәлер ҡаршы бергә эш итеү өсөн аҫтыртын һүҙ ҡуйышыуы. *Заговор ҡороу.* ■ *Совет хөкүмәте Чека ҡулы менән заговорҙарҙы һәм гисъяндарҙы баҫты.* «Совет Башҡортостанының ун йылы», 1929.

**ЗАГОВОРСЫ** *и.* Заговорҙа ҡатнашҡан кеше. *Заговорсылар төркөмө.*

**ЗАГО́Н** [*рус.*] *и.* **1.** Бер буй баҫыу ере. *Ана, баҫыу ҡарабы ла күренде. Ул, яҫмаларҙы йота-йота, беҙгә ҡаршы килде лә, загон башына еткәс, туҡтаны.* Р. Низамов.

**2.** Көтөүлектең кәртәләп алынған бер өлөшө. *Загон системаһы.* ■ *Бөтә көтөүлектәр загондарға бүленеп, мал унда нәүбәтләп көтөлә.* «Совет Башҡортостаны», 1965, 14 май.

**ЗАГОНЛАУ** *к.* Загондарға бүлеү. *Загонлап һөрөү. Загонлап көтөү. Көтөүлекте загонлап файҙаланыу.*

**ЗАГРАЖДЕ́НИЕ** [*рус.*] *и.* Дошман хәрәкәтен тотҡарлау маҡсатында ҡоролған кәртә. *Мина заграждениеһы. Заграждение һыҙығы.* ■ *Посёлканы уратып бер нисә ҡат тимер сыбыҡ заграждениеһы [ҡоролған].* Ж. Кейекбаев.

**ЗАГС** [*рус.*] *и.* Башҡарма комитеттың тыуыу, үлеү, никахлашыу, айырылышыу, ҡарамаҡҡа алыу факттарын теркәй торған бүлеге. *Кемдәрҙеңдер ғаилә башлауҙарын теркәр тағы загс өҫтәле.* Ғ. Сәләм. **Загстан үтеү** никахҡа инеү; яҙылышыу.

**ЗАГСЛАУ** *к.* Никахты теркәү. *Загслап ҡатын алыу.* ■ *[Тимер:] Их, Нина... ҡасан беҙ загслап бергә тора башларбыҙ икән?* Б. Бикбай.

**ЗАГСЛАШЫУ** *к.* Никахҡа инеү; яҙылышыу. *Йөрөп барҙым, һөйөп барҙым, загслаштыҡ, туй булды.* Т. Арслан.

**ЗАГСЛЫ** *с. һөйл.* Загс тарафынан теркәлгән; загстан үткән, никахҡа ингән. *Загслы ҡатын. Загслы ир. // Загслы йәшәү.*

**ЗАГСҺЫҘ** *с. һөйл.* Загс тарафынан теркәүһеҙ. *Загсһыҙ ҡатын. // Загсһыҙ йәшәү.*

**ЗАҒФОРАН** *и. ҡар.* **зәғферән.**

**ЗАДА** [*фарс.*] *и. иҫк. кит.* **1.** Ир бала.

**2.** Баш кешенең улы. *Хан зада. Шаһ зада.*

♦ **Хәләл зада** никахлы ғаиләлә тыуған бала. **Харам зада** никахһыҙ тыуған бала.

**ЗАДА́НИЕ** [*рус.*] *и. һөйл.* Эш, йөкләмә. *План заданиеһы. Хәрби задание. Яуаплы задание үтәү.* ■ *Нәгим ни, задание тине лә сәстерҙе, задание тине лә сәстерҙе. Өҫтәп-өҫтәп задание була тиме икән?* Һ. Дәүләтшина.

**ЗАДА́ТКА** [*рус.* задаток) *и.* Түләнәһе иҫәптән көн элек бирелгән аҡса йәки бүтән нәмә. *Задатка аҡсаһы. Задатка алыу.*

**ЗАДЕ́Л** [*рус.*] *и.* **1.** Башлап, дауам итергә йәтешләп ҡуйылған эш. *Задел әҙерләү.* ■ *Ҡыш эшләү өсөн етерлек задел булмағанлыҡтан, күп бригадалар эшһеҙ тора.* «Совет Башҡортостаны», 1965, 27 февраль.

**2.** Киләһе көн өсөн алдан күпмелер эшләп ҡуйылған эш. *Задел бар. Задел юҡ.*

**ЗАЁЗД** [*рус.*] *и.* **1.** Ат йәки машина менән сабышҡандағы бер сығыш. *Тәүге заезд. Финал заезы. Заездан сығыу.*

**2.** Санаторийға, ял йортона һ. б. ял итергә килгән яңы төркөм. *Ял йортона йылына ун тапҡыр килеп, ун тапҡыр китә халыҡ. .. һәр бер заезда ете йөҙ кеше.* «Башҡортостан ҡыҙы», 1969, № 9.

**ЗАЁМ** [*рус.*] *и.* Билдәле бер шарт менән бурысҡа аҡса туплауҙан ғибәрәт булған финанс операцияһы. *Дәүләт заёмы. Заёмга яҙылыу.*

**ЗАЖИГА́ЛКА** [*рус.*] *и.* Ут тоҡандырыу өсөн шырпы урынына ҡулланылған прибор. *Зажигалканан тоҡандырыу.*

**ЗАИЛ** [*ғәр.*]: **заил булыу** *иҫк. кит.* 1) юҡҡа сығыу, бөтөү. *Ғәзиз ата балаһа инем, булдым заил, айырылмаҡты тәҡдир ҡылды мәүләм йәлил* (Бәйеттән); 2) мәхрүм булыу. *Аҡылдан заил булыу.*

**ЗАЙНАТЫУ** *к.* Моңло, сағыу итеп һыҙҙырыу; сыңғыратыу. *Көрәгәсе гармунсыға уң күҙен ҡыҫыу була: зайнатып тартып ебәрә дәртле бейеү көйөнә.* Р. Сафин.

**ЗАЙЫҒ** [*ғәр.*] *с. иҫк. кит.* Әрәм, зая үткән. *Һиммәтле ҡандай ирҙәр зайыг булып, аяғы кешән менән тышауланган.* Аҡмулла. *Ялғанлыҡ һәм уғырылыҡ хөкөмөндә бәрәбәрҙер, дәрәжәне, мәнсабты, фазыләт вә хөрмәтте зайыг ҡыла торған фигелдер.* М. Өмөтбаев.

♦ **Аҡылға зайыҒ** *шул уҡ* **аҡылға зәғиф** (*ҡар.* **аҡыл).**

**ЗАКА́З** [*рус.*] *и.* Ниҙер эшләтеү, килтертеү өсөн ҡушҡан эш. *Индивидуаль заказ. Заказ алыу.* ■ *[Захаров:] Алло! Егерме биш минуттан миңә Мәскәү менән һөйләшергә заказ бирегеҙ. Егоров менән тоташтырһындар.* Ф. Лоҡманов.

**ЗАКАЗЛАУ** *к.* Почта яуаплығына тапшырыу (хатты). *Хаттар ғына һалһаң, һал заказлап, заказлы ла хаттар тиҙ урай* (Халыҡ йырынан).

**ЗАКАЗЛЫ** *с.* **1.** Заказ биреп эшләнгән. *Заказлы кейем. Заказлы китап.*

**2.** Заказлап ебәрелгән. *Заказлы бандероль. Заказлы хат.*

**ЗАКА́ЗНИК** [*рус.*] *и.* Ҡайһы бер төр үҫемлектәр, ҡош-ҡорт, йәнлектәр һ. б. махсус һаҡлауға алынған урман, тау, ер-һыу биләмәһе, участогы. *Ҡондоҙ заказнигы. Заказник яһау. Заказник итеү.*

**ЗАКАЗНО́Й** [*рус.*] *с. ҡар.* **заказлы.**

**ЗАКАЗСЫ** *и.* Заказ биргән кеше йәки ойошма. *Төп заказсы. // Заказсы завод.* ■ *Төҙөлөш ойошмаһы заказсыға әҙер эш өсөн генә иҫәп бирҙе. Йорттар графикта күрһәтелгән ваҡытҡа төҙөлөп бөттө.* «Совет Башҡортостаны», 1968, 9 ғинуар.

**ЗАКАТ** [*ғәр.*] *и. иҫк.* Шәриғәт буйынса, байҙарҙың йыллыҡ төшөмөнөң хәйергә бирелергә тейеш булған ҡырҡтан бер өлөшө. *Закат алыу. Закат биреү.* ■ *[Кәрим бай:] Осраны бит иҫерек Хәйруш. Туҡтаны ла, давай аҡса, ти. Минең эсергә аҡсам юҡ, ти. Һинең ҡорһағың бик йыуан, кеҫәң дә ҡалын, әҙерәк закатын сығарып ҡит әле, ти.* Х. Ибраһимов.

**ЗАКАТЛЫ** *с.* Закат бирер хәлдәге; хәлле. *Ил имамдары ла, закатлы, сағаклы байҙар ҙа Николай батша яңынан ҡайта, имеш, тиҙәр.* З. Бәшири.

**ЗАКАТСЫ** *и.* Закат йыйыған кеше.

**ЗАКИР** [*ғәр.*] *и.* **1.** Телгә алыусы, иҫкә алып һөйләүсе.

**2.** *иҫк.* Зекер (2 мәғ.) әйтеүсе.

**3.** *(баш хәреф менән)* Ир-ат исеме.

**ЗА́КИСЬ** [*рус.*] *и. шул уҡ* **көсһөҙ әсемә** *(кар.* **әсемә).**

**ЗАКЛА́Д** [*рус.*] *и. һөйл.* Вәғәҙәне, һүҙҙе нығытыу өсөн алдан бирелгән аҡса йәки башҡа нәмә; аманат, залог. **Заклад** *(йәки* **закладка)** **һалыу** вәғәҙәне, һүҙҙе нығытыр өсөн аҡса йәки бүтән нәмә һалыу. *Заклад һалып бәхәсләшеү.* ■ *[Зәйни:] Шәғәли, булмаһа, бына пинжәгемде закладка һалып ҡалдырайым, биреп ебәр.* С. Мифтахов.

**ЗАКО́Н** [*рус.*] *и.* **1.** Дәүләт власының юғарғы органы тарафынан тейешле тәртиптә ҡабул ителгәндән һуң юғары юридик көскә эйә булған норматив акт; ҡанун. *Закон проекты. Закондар йыйынтығы. Законға лайыҡ. Законға ҡаршы. Закон сығарыусы.* ■ *Крәҫтиән яуы баҫтырылғандан һуң, батша хөкүмәте .. Салауаттың шиғырҙарын закондан тыш тип иғлан иткән.* З. Шәрҡи.

**2.** Үтәлергә тейешле ҡәтғи бойороҡ. *[Сынбулатов] үҙенең колхозда берҙән-бер кеше итеп һанай: уның һүҙе генә закон булһын, башҡалар уға тел тейҙерергә тейеш түгел.* М. Тажи.

**3.** Ҡабул ителгән дөйөм ҡағиҙә, тәртип; заң. *[Ҡотлояр:] Хәҙер килендәргә ҡайны-ҡайнағалар менән һөйләшмәҫкә тигән закон сәпсим бөткән.* Һ. Дәүләтшина.

**4.** Төрлө күренеш араһындағы объектив бәйләнеш; сәбәп менән һөҙөмтә араһындағы эске бәйләнеш. *Йәмғиәт закондары. Тәбиғәт закондары. Энергия һаҡлау законы.*

◆ **Закон башлығы** *һөйл.* ҡулында хөкөмө бар кеше. *[Үмәр — муллаға:] Ул [Ныяҙғол], дөрөҫ, закон башлығы кеше, ә шәриғәттән, диндән уҙып бер ҡайҙа ла китә алмаҫ.* Һ. Дәүләтшина. **Закон эйәһе** *көлк.* законды белгән булып ҡыланған, закон менән ҡурҡытып маташҡан кеше.— *Мин судҡа бирәм! — тип, [Шәүәли] үҙенең закон эйәһе икәнен күрһәтергә самалап ҡараны.* В. Викбай.

**ЗАКОНЛАШТЫРЫЛЫУ** *ҡ. төш. ҡар.* **законлаштырыу.** *Законлаштырылған тәртип.*

**ЗАКОНЛАШТЫРЫУ** *ҡ.* Закон (1 мәғ.) менән нығытыу, законлы итеү. *Башҡорттар Рус дәүләтенә ҡушылғас, Иван Грозный уларға үҙ ер-һыуҙарын үҙҙәре файҙаланырға законлаштырып, айырым грамота биргән.* Ә. Харисов.

**ЗАКОНЛАШЫУ** *ҡ.* Закон (1 мәғ.) төҫөн алыу, законға әйләнеү. *Законлашҡан ҡағиҙә.* ■ *Ул беҙҙә шул рәүешсә [дөрөҫ булмаған көйө] законлашып та бара инде.* Ә. Вәли.

**ЗАКОНЛЫ** *с.* **1.** Закон (1 мәғ.) менән нығытылған, законға нигеҙләнгән, законға ярашлы. *Законлы вариҫ. Законлы хоҡуҡ.*

**2.** Объектив законға (4 мәғ.) буйһонған. *Законлы күренеш. Законлы тарихи процесс.* ■ *Үҙебеҙҙең нисәмә көндәр фронттан ҡасып, йәшеренеп йөрөүебеҙҙе, һуғыш арҡаһында килеп сыҡҡан законлы бер аҙым .. икәнлегенә төшөндөм.* Д. Юлтый.

**3.** *ҡусм.* Дөрөҫ, нигеҙле. *Законлы талап.*

**ЗАКОНЛЫҠ** *и.* **1.** Закон (1 мәғ.) менән нығытылған, законға нигеҙләнгән хәл. *Социалистик законлыҡ. Законлыҡты һаҡлау.* ■ *Совет дәүләте, уның бөтә органдары социалистик законлыҡ нигеҙендә эш итә хоҡуҡ тәртибен, йәмғиәт мәнфәғәттәрен, граждандарҙың хоҡуҡтарын һәм ирекҭәрен һаҡлауҙы тәьмин итә.* Башҡорт АССР-ының Конституцияһы, 1984.

**2.** Объектив законға (4 мәғ.) буйһонған хәл. *Тәбиғәттең үҫеш законлығы.* ■ *Ләкин был осраҡта ҡоро өндәр ярашыуы ғына түгел, телдәге образлылыҡ принциптарының ҡайһы бер законлығы ла асыла.* К. Мәргән.

**ЗАКОНСА** *р.* Законға нигеҙле рәүештә. *Законса эшләү. Законса хәл итеү.* ■ *[Туҡтамышев:] Рыҫҡол, ҡаҙнаны бик онота башланың әле. Ахыры законсараҡ һөйләшергә тура килер.* Б. Бикбай.

**ЗАКОНСЫ** *и.* **1.** Закон (1 мәғ.) сығарыусы. // *Законсы орган.*

**2.** Законды (1 мәғ.) белгән кеше.

**ЗАКОНҺЫҘ** *с.* Закон (1 мәғ.) менән нығытылмаған, законға ярашһыҙ. *Законһыҙ эш.* // *Законһыҙ йәшәү. Законһыҙ эшләү.* ■ *[Айбулат] Михаилдың һүҙен булеп тигәндәй, үҙенең законһыҙ-ниһеҙ, хатта отрубка һатыу хаҡын да түләмәйенсә, Ныяҙғолға ҡусҡән ере тураһында һөйләп китте.* Һ. Дәүләтшина. *БАССР граждандары дәүләт һәм йәмғиәт ойошмаларының шулай уҡ вазифалы кешеләрҙең үҙ хеҙмәт вазифаларын башҡарғанда законһыҙ эш итеүҙәре арҡаһында килтерелгән зыянды түләтергә хоҡуҡлы.* Башҡорт АССР-ының Конституцияһы, 1984.

**ЗАКОНҺЫҘЛЫҠ** *и.* Законға (1 мәғ.) һыймаған эш-хәл; башбаштаҡлыҡ. *Законһыҙлыҡ эшләү.* ■ *Бер нindәй ҙә алмашыу түгел, ә законһыҙлыҡты йәшереү өсөн уйлап сығарылған алдашыу булған был эш.* «Һәнәк», 1966, № 5.

**ЗАКРО́Й** [*рус.*] *с. һөйл.* Ваҡ таҡтанан билдәле тәртиптә арҡыс-торҡос ҡуйып түшәлгән. *Ҡаҙарманың иҙәне закрой булмаҫ, буй булыр* (Халыҡ йырынан).

**ЗА́КУП** [*рус.* закупка] *и.* Дәүләттең халыҡтан аҙыҡ-түлек, мал йәки башҡа нәмә һатып алыуы. *Закуп комиссияһы. Закуп алыу (йәки йыйыу). Закупка һатыу.* ■ *[Әхмәҙуллин:] Арсланов беренсе секретарь булып килгән йылды беҙҙә картуф бик уңғайны. Заданиены ла тиҙ үтәнек, закупка ла байтаҡ һаттыҡ.* Д. Исламов.

**ЗАКУПСЫ** *и.* Закуп алған дәүләт ойошмаһы. / Закуп йыйыған кеше.

**ЗАКУ́СКА** [*рус.*] *и.* Аш алдынан бирелгән еңел ашамлыҡ. *[Әклимә:] Минең исемдән шеф поварға әйт: кухняла булған бөтә байлыҡты сығарып, иң алда һалҡын закуска әҙерләһен.* Н. Иҙелбай. / Эскәндә ҡаба торған ашамлыҡ. *Беҙ ул көн бөтә донъяны онотоп, аҡылдан шашып эстек. Бөтә закускаларҙы ашап бөттөк.* Д. Юлтый.

**ЗАКУ́СОЧНЫЙ** [*рус.* закусочная] *и.* Ашаштырып сығa торған урын. *Закусочныйға инеп ашау.*

**ЗАҠЫМ** *и. кар.* **зәҡҡум.**

**ЗАЛ** [*рус.* ⟨ *нем.*] *и.* **1.** Йыйылыш йәки башҡа күмәк сара өсөн тәғәйенләнгән ҙур бүлмә. *Концерт залы. Спорт залы. Суд залы. Тамаша залы.* ■ *Зал булһын, әйҙә халыҡ тулһын. Сәсрәп торһон утлы һүҙ.* С. Агиш.

**2.** Ҡунаҡ, тантана өсөн тәғәйенләнгән киң бүлмә. *Раҡыя менән Сәхибә үткелектә кейемдәрен һалғандан һуң зал аша бүлмәгә уҙҙы.* Ғ. Хәйри.

**ЗАЛИМ** [*ғәр.*] *с.* **1.** Мәрхәмәтһеҙ, ҡаты бәғәрле; ғәҙел булмаған. *Залим батша.* ■ *[Ҡатын] күҙен йомһа, залим ирен күреп, тертләп китә ҡурҡыу алғанға.* С. Ҡудаш.— *Ура! ..— Ура!..— Залим хөкүмәт бөткән!..— Батшаның тәхете емерелгән!* М. Ғафури.

**2.** *и. мәғ.* Иҙеүсе, йәбер-золом итеүсе. *«Яуыз йәндәр һәм дә ғали заттар» беҙҙең юлға кәртә һалмаһын, «Берлектә көс!» Эшсе! Залимдарҙы һепереп түгәйек, береһе ҡалмаһын.* Ғ. Хәйри.

◆ **Залим йәлләт** баш кисеүсе, яҙалаусы кеше. *Мәңгелеккә юҡҡа сыҡһын залим йәлләт ҡылысы!* С. Рәхмәтуллин.

**ЗАЛИМАНА** [*ғәр.*] *с.* Мәрхәмәтһеҙ, ҡаты бәғәрле; залимдарға хас. *Һибәттең ҡыҙарған күҙҙәре менән залимана ҡараштарынан [Зәйнәптең] ҡото осто.* А. Таһиров.

**ЗАЛИМЛЫҠ** *и.* Мәрхәмәтһеҙлек, ҡаты бәғерлелек; залимдарға хас тәбиғәт, сифат. *Залимлыҡ ҡылыу.*

**ЗАЛИМӘ** [*ғәр.*] *и.* Мәрхәмәтһеҙ, ҡаты бәғерле ҡатын; залимдарға хас тәбиғәтле ҡатын.

**ЗАЛО́Г** [*рус.*] *и.* **1.** Бурысҡа алған аҡса урынына ҡалдырып торолған нәмә. *Залог алыу. Залогҡа һалыу.* ■ *1912-1913 йылдарҙа залогҡа ике миллион боттан артыҡ ашлыҡ алынған.* «Совет Башҡортостанының ун йылы», 1929.

**2.** Йөкләмәне йәки вәғәҙәне нығытыу өсөн алдан бирелгән аҡса; аманат, заклад. *Залог аҡсаһы. Залог һалыу.* ■ *[Китапханасы:] һин китапҡа яҙылырға теләйһеңме?.. Аҡсаң бармы һуң? Залог индерергә кәрәк бит.* Х. Мохтар.

**ЗАЛО́ЖНИК** [*рус.*] *и.* Йөкләмәне йәки вәғәҙәне нығытыу өсөн ҡалдырылған кеше; аманат. *Заложник итеп тотоу.*

**ЗАЛО́М** [*рус.*] и. *кар* **тығын** [1] 1, 2.

**ЗАЛП** [*рус.*] *и.* Бер юлы бер нисә ҡоралдан атҡан ут. *Залп биреү. Залп менән атыу.* ■ *Ҡапыл яҡында ғына, ауыл ситендә, туптан атылған залп ишетелде.* А. Таһиров.

**ЗАМА́ЗКА** [*рус.*] *и. кар.* **замаска.**

**ЗАМАН** [*ғәр*] *и.* **1.** Ҙур ваҡиғалар, хәлдәр, ниндәйҙер үҙенсәлектәр менән билдәләнгән оҙайлы ваҡыт; осор. *Боронғо заман.* ■ *Элекке заманда ярлы балаларына уҡыу эше бик ҡыйбатҡа төшә торғайны.* Т. Йәнәби. *Фәлсәфә сәйнәр заман уҙған, хәҙер эшләр заман.* Ш. Бабич. / Билдәле бер осор, дәүер, ваҡыт (кешелек, халыҡ, дәүләт һ. б. тормошонда). *Заман кешеһе.* ■ *Йыйылышта иң күп халыҡ муллалар, сауҙагәрҙәр, заман байҙары була.* З. Шәрҡи. **Заманына күрә** үҙ заманына ярарлыҡ. *Беҙҙең халыҡ борон-борондан үҙ тарихы менән ҡыҙыҡһынған. Заманына күрә уның уҡымышлы кешеләре лә булған.* «Совет Башҡортостаны», 1966, 21 август.

**2.** Тормоштағы билдәле бер ваҡыт; саҡ. *Сабый заманда ата вә ананан ғилем вә әҙәпте ишетеп сыҡмаҡ кәрәктер.* М. Өмөтбаев. / Йылдың, тәүлектең билдәле бер мәле, ваҡыты. *Төн заманында уятып килеп инделәр.* ■ *[Рәхимә:] Хәҙер көн оҙайған заман, бик өлгөрөп була ул.* Һ. Дәүләтшина.

**3.** *грам.* Ҡылымдың эш-хәрәкәттең һөйләү моментына ҡарата ваҡыт мөнәсәбәтен күрһәтә торған формаһы. *Хәҙерге заман [формаһы]. Киләсәк заман [формаһы].*

◆ **Атам заманы** әллә ҡасан үткән ваҡыт.— *Атам заманындағы иҫке китаптарҙа ҡайҙан коммунистар тураһында яҙылһын инде, алдаҡсы!* Һ. Дәүләтшина. **Ахыры заман** (*йәки* **заман ахыры**) дини ҡарашса, тереклек донъяһы юҡҡа сығасаҡ ваҡыт. *[Һылыу әбей:] Эй, гүмеркәйҙәр. .. Ахыры заман яҡындыр инде. Шулай булмаһа, халыҡ был тиклем аҙмаҫ ине.* Т. Йәнәби. **[Бына] бер заман** берҙән-бер ваҡыт. *Бына бер заман батша ғәскәрҙәре ябырылып килә башлай* (Әкиәттән). **Заман ахыры һалыу** йәнде ҡыйыу, үлтереү. *[Бабсаҡ:] Туҡтамаҫтан, хоҙай ҡушһа, барайым мин, ул йыртҡысҡа заман ахыры һалайым мин.* «Бабсаҡ менән Күсәк». **Заман[а] еле** билдәле бер осорға хас шауҡым, йоғонто. *Яҙыусы, йәшенә һәм тәжрибәһенә ҡарамай, һәйбәт һәм үтемле яҙырға, уның һәр һүҙе заман еле менән һуғарылырға тейеш.* «Совет Башҡортостаны», 1985, 17 ноябрь. **Ҡан заман** *шул уҡ* **хан заман[ы]** (*кар.* **хан**).— *Әрменән ҡайтҡанына ҡан заман, рәте юҡтыр йүнһеҙҙең,— тиеште шаянырак ҡатындар.* Р. Низамов. **Мамай** (*йәки* **нуғай**) **заманы** бик боронғо заман. **Ни** (*йәки* **ҡай**) **заман** ни хәтле, күпме ваҡыт. *Ваҡыт юҡта ни заман көттөрәһең беҙҙе.* **Ни заман тигәнсе** бик тиҙ, һә тигәнсе.— *Беҙ ни, нәмәләрҙе, йыуасаларҙы әҙерләп ҡуйҙыҡ. Тейәйһе генә бар. Уны ни заман тигәнсе тейәрбеҙ.* М. Буранғолов. **Нух заманы** *шул уҡ* **хан заман[ы]** (*кар.* **хан**). *Арыҡ буйвол нух заманынан ҡалған һабанды һөйрәп, саҡ-саҡ күренерлек бураҙна йырып бара.* «Совет Башҡортостаны», 1965, 19 июнь. **Эт башына эркет түгелгән заман** тормоштағы мул ваҡыт. **Әллә ни замандан[бирле]** бик электән, бик күптән. *Тауҙың дәл түбәһенә әллә ни замандарҙан бирле ниндәйҙер бер әүлиә әйәләшкән.* Ғ. Дәүләтшин.

**ЗАМАНА** [*ғәр.*] *и.* Кеше үҙе йәшәгән үҙенсәлекле осор; дәүер. *Замана талабы. Замана һулышы.* ■ *Еләнле, бишмәтле замандан модалар тыуҙырған заманам. Ҡарғатуйҙан, һабантуйҙан йолалар тыуҙырған заманам.* Т. Ҡарамышева. *Заманалар булған элгәре, булған илдең батыр улдары. Баш етмәҫлек эштәр эшләгәндәр, бөтә ғаләм белгән уларҙы.* Салауат Юлаев. / Әйәлек бәйләнешендә килеп, кемдеңдер, нимәнеңдер шул осорға хас билдә йөрөткәнен белдерә. *Замана балаһы.* ■ *[Исмәғил] үҙәнең ошо уҡыған мәктәбенә яңы тәртип индерергә, замана мәктәбе яһарға тырыша.* Ғ. Дәүләтшин.

● *Көслөнөкө замана.* Әйтем.

**ЗАМАНАУИ** *с.* Заманға хас. *Заманауи идея.* ■ *Автор яңы осорға ҡыҫҡа һәм аныҡ анализ бирә, уның төп тормошсан йүнәлешен, заманауи темаларын һәм идеяларын, эстетик ҡиммәтен асыҡлаған мөһим һыҙаттарын билдәләп үтә.* Ә. Хәкимов.

**ЗАМАНДАШ** *и.* Кем менәндер бер тарихи осорҙа йәшәгән йәки йәшәүсе кеше. *Төш, йырым, шахта төбөнә, ҡайна мартендарҙа, ян. Еңеүсе замандашымдың хеҙмәтенә йырла дан.* Ғ. Әмири.

**ЗАМАНИ** [*ғәр.*] *с.* Ваҡытлы. *Замани тәртип.*

**ЗАМАНСА** *р.* Заманға хас рәүештә. *Заманса йәшәү.* ■ *Әсә, дөрөҫөндә, балаларына артыҡ ныҡ асыуланмай, уларҙың замансараҡ йөрөүен теләй.* С. Агиш. / Заман талап иткәнсә, заман ҡушҡанса. *Заманса эшләү. Заманса донъя көтөү.* ■ *Замандашты ҡыҙыҡһындырған актуаль проблемаларҙы заманса, тейешле юғарылыҡта образлы кәүҙәләндереү кеүәһе һәр яҙыусының индивидуаль талантына бәйле.* Р. Ваимов. *Йәш ваҡытта тырышып ҡалығыҙ һиммәт, иктизаи заманса итеп гәйрәт.* С. Яҡшығолов.

**ЗАМАНСАЛАТЫУ** *к.* Заманса иттереү. *Булмәнс замансалатып йыйыштырыу. Кейемде замансалатып тегеү. Өйҙө замансалатып һалыу.*

**ЗАМАНСАЛАУ** *к.* Заманса итеү. *Замансалап донъя көтөү. Замансалап яҙыу.*

**ЗАМАНСАЛАШТЫРЫУ** *к.* Заманға яраҡлаштырыу. *Замансалаштырып һурәтләү.*

**ЗАМАНЫНДА** *р.* Үҙ ғүмерендә, ҡасандыр бер заманда; үҙ ваҡытында. *Заманында Ҡурман харунъяла һалдат булып хеҙмәт иткән.* Ғ. Дәүләтшин.

**ЗАМА́СКА** [*рус.* замазка] *и.* Екте һылар өсөн аҡбурға әлиф, елем ҡушып эшләнгән йәбешкәк, ҡамыр һымаҡ матдә. *Тәҙрә замасҡаһы. Замаска менән һылау.*

**ЗАМАСКАЛАНЫУ** *к. төш. ҡар.* **замаскалау.** *Замаскаланган тәҙрә.*

**ЗАМАСКАЛАТЫУ** *к. йөкм. ҡар.* **замаскалау.** *Тәҙрәне замаскалатыу.*

**ЗАМАСКАЛАУ** *к.* Замаска менән һылау. *Тәҙрәне замаскалау.*

**ЗАМАСКАЛЫ** *с.* Замаска менән һыланған, замаскаланған. *Замаскалы тәҙрә.*

**ЗАМЕЧА́НИЕ** [*рус.*] *и.* **1.** *һөйл.* Нимәгәлер ҡарата әйтелгән һүҙ (ғәҙәттә тәнҡит рәүешендә була). *Замечание яһау. Күрһәтелгән замечаниелар буйынса эште яңынан ҡарап сығыу.*

**2.** *ҡар.* **шелтә.** *Эшкә һуңлаған өсөн замечание алды.*

**ЗАМИР** [1] [*ғәр.*] *һөйл. и.* **1.** Тәьҫир, шауҡым. *Йүткереү — һыуыҡтың замиры. Замиры төшөү.* ■ *[Мәгүҙә:] Беҙҙең тиҫтер бисәләр береһе-бер тиерлек пенсияға әләкмәне. Һуғыш ваҡытында ауыр эштән ватылып, ҡыйралып бөткәс ни .. Ҡайныһының биле эшкинмәһенме, икенсеһенең башы ауыртһынмы — былар бөтәһе лә һуғыш замиры инде.* Т. Килмөхәмәтов.

**2.** *ҡар.* **ҡоһор** 3. *Кисә ашамағандың замирын бөгөн ҡайтарҙы.*

♦ **Замирын килтереү** шартына килтереү, еренә еткереү. *Замирын килтереп эшләү.*

**ЗАМИР** [2] [*ғәр.*] *и. иҫк. кит.* Намыҫ, выждан. *Тәгәссөбөн ҡалдырмаҫ боҙоҡ замир.* Аҡмулла.

**ЗА́МОК** [*рус.*] *и.* Феодал һарайы һәм уны уратып алған ҡәлғә. *Урта быуат замогы.* ■ *Егерме бер йәшлек лейтенант дошманды күҙәтеп замок башняһында ултырған.* Ғ. Сәләм.

**ЗАМО́К** [*рус.*] *и.* Туп көбәгенә йәҙрәне бикләп ата торған механизм. *Замокты ябыу.*

**ЗА́МША** [*рус.*] *и.* Болан, мышы йәки һарыҡ тиреһенән бәрхәт һымаҡ итеп эшләнгән йомшаҡ күн. *Замша бәрхәте. Тәбиғи замша. Яһалма замша.* // *Замша бейәләй. Замша итек.* ■ *Ябай ғына ҡара юбка, аҡ ебәк кофта, бейек күтәрмәле ҡара замша ботинка ла Людмила Матвеевнаның өҫтөндә үҙенә башҡа бөхтәлек, матурлыҡ менән айырылып тора.* З. Биишева.

**ЗАН** [*ғәр.*] *и иҫк. кит.* **1.** Башта йөрөгән уй.

**2.** Фараз.

□ **Зан итеү** (*йәки* **ҡылыу**) уйлау; фекер итеү. *[Бикташир:] Насип булһа, икәүебеҙ бергә рәхәт-рәхәт йәшәрбеҙ.., тип зан итәмен.* З. Өммәти. *Оҙон ваҡыттар һөйләшеп ултырҙым, мәгәр гилме һәм иггидары Шәмсетдин суфый дәрәжәһенән күп түбән булыр тип зан ҡылдым.* Р. Фәхретдинов.

**ЗАНЯ́ТИЕ** [*рус.*] *и.* **1.** *ҡар.* **дәрес.** *Арифметиканан занятие булды.*

**2.** *ҡар.* **һабаҡ** [2] 1. *Өйгә бирелгән занятиеңды ҡара.*

**3.** Билдәле бер маҡсатта үткәрелгән уҡыу, күнекмә алыу эше. *Дәрестән тыш занятие. Түңәрәк занятиеһы. Халыҡ университетының нәүбәттәге занятиеһы.*

**4.** Ғәскәри шөғөл, күнекмә. *Иртәнге занятие. Киске занятие.* ■ *[Новиков:] Беләһеңме, беҙгә бында бик яҡшы ял бирәләр. Һәр көн иртә менән дүрт сәғәткә строевой занятиега алып сығалар.* Д. Юлтый.

**ЗАҢ** [*ғәр.*] *и. иҫк.* **1.** Үтәлеүе мәжбүри булған дөйөм ҡағиҙә; ҡанун, закон. *Оҙаҡламай беҙ хандарҙың бөтө заңдарына ҡаршы рәхимһеҙ һуғыш асырбыҙ.* Ш. Шәһәр.

**2.** Ҡабул ителгән дөйөм ҡағиҙә; ғөрөф-ғәҙәт, йола. *Ҡара наҙан заң ҡыуып, шәриғәткә ҡарамаған.* Аҡмулла.

● *Заман башҡа — заң башҡа.* Мәҡәл.

**ЗАН-ЙОЛА** *и. йыйн.* Ҡабул ителгән дөйөм ҡағиҙәләр. *Заһ-йола буйынса. Заң-йоланы һаҡлау.* ■ *Байҙар ҡалынына саҡырылған кешенең мәжлескә бармауы бик ҙур гәйептән һанала. Әлимә ундай урынға барырға яратмаһа ла, халыҡтың заң-йолаһы буйынса барырға мәжбүр ине.* Д. Юлтый.

**ЗАПА́Л** [*рус.*] *и.* Шартлағыс нәмәне тоҡандырып ебәрә торған ҡулайлама. *Гранат запалы. Мина запалы.* ■ *[Һалдат].. гранаттың шартлағыс запалына ҡуйылған ҡулсаны тартып өҙҙө.* Ғ. Ибраһимов.

**ЗАПА́С** [*рус.*] *и.* **1.** Киләсәккә һаҡлап тотолған нәмә; һаҡлыҡ нәмә; һаҡ. *Аҙыҡ запасы. Орлоҡ запасы.* // *Запас аҙыҡ. Запас кейем. Запас ягыулыҡ.* ■ *Хәлләләр, байҙар үҙҙәренең элекке йылғы запастары менән йәшәне.* Һ. Дәүләтшина.

**2.** Тәбиғи рәүештә булған нәмә миҡдары. *Дым запасы. Тәндәге витамин запасы. Илдәге ағас запасы. Нефть запасы.* / *күсм.* Кешеләге белем, һәләтлек һ. б. нәмә күләме. *Һүҙ запасы.*

■ *Х класҡа килгәндә уҡыусыларҙа .. билдәле бер күләмдә белем запасы була.* М. Ғималова.

**3.** *һөйл.* Кейем теккәндә йөйгә ҡалдырылған артыҡ өлөш. *Запас ҡалдырып тегеү.*

**4.** Һуғыш ваҡытында хәрби хеҙмәткә алыныրға тейешле, хәрби иҫәптә тора торған граждандар. *Запастағы генерал. Запастағы лейтенант. Запасҡа ебәреү. // Запас полк.* ■ *[Новиков:] һинең атайың да ҡарт запас һалдат булып мобилизовать ителгән, үҙең дә .. һуғышҡа килгәнһең.* Д. Юлтый. *Кисә минең яҡташымдың хәҙмәт сроғы тулды. Ә бөгөн уға запасҡа китергә приказ булды.* З. Рафиҡов.

● *Запас ашарға һорамай.* Әйтем.

**ЗАПАСЛАНЫУ** *ҡ.* Запас (1 мәғ.) йыйыу, запас туплау. *Иген менән запасланыу. Запасланып ҡалыу.*

**ЗАПАСЛЫ** *с.* Запас (1 мәғ.) тотҡан, запасы бар; һаҡлыҡлы. *Запаслы кеше.* ■ *[Ғариф:] Урыҫ запаслы була бит ул, ҡыяр, ҡарбуҙ, ҡауын орлоғо биреп ебәрҙе бына.* Б. Бикбай.

**ЗАПА́ШНИК** [*рус.*] *и.* Һай ғына һөрөп, ерҙе йомшарта, сәселгән орлоҡто күмдерә торған ике яҡлы бәләкәй һабандың төрө. *Трактор запашнигы. Запашник менән ер йомшартыу.*

**ЗАПОВЕ́ДНИК** [*рус.*] *и.* Тәбиғәтте үҙ хәлендә һаҡлау өсөн ағас киҫеү, балыҡ тотоу һәм һунар кейек эштәр тыйылған урын. *Башҡорт заповеднигы.* ■ *Бөрйән районында махсус бал ҡорто заповеднигы ойошторолған.* «Ағиҙел», 1967, № 3.

**ЗА́ПОНКА** [*рус.*] *и.* Ирҙәр күлдәгенең еңенә, яғаһына ҡуйыла торған ҡаптырма. *Алтын запонка. Ҡашлы запонка.*

**ЗАПРА́ВКА** [*рус.*] *и.* Машина һ. б. приборҙарға яғыулыҡ, май ҡойоу эше. *Заправка пункты. Заправка станцияһы. Заправка яһау.* ■ *«Башҡортостан» [карабы] бер заправка менән 350 километр араны үтә ала.* «Совет Башҡортостаны», 1968, 12 ноябрь.

**ЗАПРАВКАЛАНЫУ** *ҡ. төш. ҡар.* **заправкалау.** *Заправкаланған машина.*

**ЗАПРАВКАЛАУ** *ҡ.* Яғыулыҡ, май һ. б. ҡойоп, машинаны, приборҙарҙы эшкә әҙерләү. *Дизель майы менән заправкалау.*

**ЗАПРАВКАСЫ** *и.* Заправка яһаусы. *Заправкасы булып эшләү.*

**ЗАПРА́ВЩИК** *и. ҡар.* **заправкасы.**

**ЗАПУН** *и. диал.* Алъяпҡыс.

**ЗАПЫН** *и. ҡар.* **тоҡон** ² *Запын күпере. Запынды бикләү.* ■ *Өйөм-өйөм боҙҙар запын бағаналарына килеп бәреләләр ҙә ватланып таралалар.* М. Тажи.

**ЗАР** [*фарс.*] *и.* **1.** Йөрәк өҙгөс ауыр кисереш; ҡайғы, хәсрәт. *Зар йыры. Зарланыр зарым юҡ. Зар һөйләү.* ■ *Шул шатлыҡтар менән ҡаршы торам был донъяның барлыҡ зарына.* Ш. Бабич. *Донъяла иң тулҡынлы .. тынмай ятҡан ил зары, туңмай ятҡан ил зары* (Ҡобайырҙан).

**2.** *с. мәғ.* Бик теләгән нәмәгә мохтаж булған. *Белемгә зар кеше. Бер күрергә зар.* ■ *Икебеҙ ике яҡтабыҙ, бер һөйләшергә зарбыҙ* (Халыҡ йырынан).

□ **Зар булыу** 1) хәсрәткә, ҡайғыға һабышыу; хәсрәтләнеү. *Баструкта зар булып, уның [Рәхимәнең] ғүмер иткән ире Ныяҙғол .. ас ултыра.* һ. Дәүләтшина; 2) бик теләгән, кәрәк бер нәмәгә мохтаж булыу; тилмереү. *Кисә ярты бот онға зар булып тилмереп .. йәшәгән башҡорт бөгөн үҙе дәүләткә меңәрләп тонна бына тигән иген һата.* Ғ. Ишбулатов; **Зар итеү** (*йәки* **ҡылыу**) 1) хәсрәткә һабыштырыу, ныҡ хәсрәтләндереү; 2) бик теләгән, кәрәк бер нәмәгә мохтаж итеү, тилмертеү. *Утынға зар итеү.*

◆ **Зар илау** *ҡар.* **илау.**

● *Саҡырғанда бармаһаң, саҡырылыуға зар булырһың.* Мәҡәл.

**ЗАРАР** [*ғәр.*] *и.* **1.** Насар һөҙөмтә биргән кире тәьҫир; зыян. *Зарары күп. Зарар килеү. Зарары тейеү.* ■ *[Самат — Барыйға:] Эшен дә эшләргә кәрәк, ләкин үҙеңдең сәләмәтлегеңә лә зарар килтерергә ярамай.* Ш. Насыров. *Ҡабат уҡыуыңа зарар килтереп, бында төшөп йөрөмә.* Б. Бикбай.

2. Ниндәйҙер материаль юғалтыуға килтергән тәьҫир; зыян, ҡаза. *Дөрөҫ, был рәүешле булған нахаҡлыҡ .. ниндәй ҙә булһа экономик зарар килтерергә теләү түгел.* С. Агиш. **Зарар күреү** ҡазаға дусар булыу, юлығыу.

□ **Зарар итеү** (*йәки* **ҡылыу**) 1) насар һөҙөмтәле тәьҫир яһау. *Ятып уҡыу күҙгә зарар итә.* ■ *Маврин оҙаҡ һөйләне, нисек тә булһа башҡорт халҡына зарар һалырға теләмәгәнлектәрен аңлатырға тырышты.* Ш. Шәһәр; 2) ҡаза килтереү. *Быйылғы королок ныҡ зарар итте.*

◆ **Зарар итмәҫ** (*йәки* **булмаҫ**) файҙаға ғына булыр, насар түгел. **Зарар юҡ** кешенең бер эше менән килешеп, уны тынысландырғанды белдереп әйтелә. *[Ҡатын:] Зарар юҡ, ул үҙенең уйлағанын әйтә.* С. Агиш.— *Ит гәфу әй, әй,— тинем мин,— нурҙарыңды урланым.— Һис зарар юҡ, ал,— тине ай.— Ал да сәс нур халҡыңа.* Ш. Бабич.

**ЗАРАРЛАНЫУ** *ҡ.* Зарар (1 мәғ.), зыян килеү; нимәнеңдер зарары, зыяны тейеү. *Ер тетрәүҙән зарарланған йорттар. Ташҡындан зарарланған баҫыуҙар. Торон менән зарарланған ужым.* ■ *[Улғыртыр алдынан] үҫентенең зарарланған тамырҙары секатор менән ҡырҡып ташлана.* «Совет Башҡортостаны», 1985, 11 ноябрь. / *күсм.* Насар тәьҫиргә юлығыу, кире һөҙөмтәһе тейеү. *Бик имен мин: милли дуҫтарҙан зарарланмаҫ йәнең һис, милли дуҫтарға йәнеңде мәңге бәйләр милли хис.* Ш. Бабич.

**ЗАРАРЛАУ** *ҡ.* **1.** Зарар (1 мәғ.) итеү, зарар килтереү. *[Боҙло йәки бысраҡ] ҡар менән ышҡыныу, тәнгә микробтар индерергә, уны зарарларға мөмкин.* В. Ғүмәров.

**2.** Материаль юғалтыуға килтереү, ҡазаға, зыянға юлыҡтырыу. *Сәсеүлектәрҙең бер ни тиклем өлөшөн дауыл һәм ҡырау зарарланы.* «Совет Башҡортостаны», 1966, 21 август.

**ЗАРАРЛЫ** *с.* Зарар (1 мәғ.), зыян (1 мәғ.) килтерә торған; насар йоғонтоло; зыянлы. *Зарарлы матдә. // Күп йоҡлау — зарарлы.* / Ҡурҡыныс тыуҙырырлыҡ, хәүефле. *[Сергеев:] Аттылар, ранен яһанылар. Бик ҡурҡҡайным да, зарарлы түгел, ҡолаҡ артынан һыҙырып үткән.* Д. Юлтый.

**ЗАРАРҺЫҘ** *с.* Насар тәьҫирһеҙ; зыянһыҙ. *Зарарһыҙ матдә.* // *Күп йөрөү — зарарһыҙ.* / Ҡурҡыныс түгел, хәүефһеҙ. *Зарарһыҙ яра.*

**ЗАРАРҺЫҘЛАНДЫРЫУ** *к.* Зарарлы матдәләрҙән, насар тәьҫирҙән арындырыу, зарарһыҙға әйләндереү. *Атом станцияһы территорияһын радиациянан зарарһыҙландырыу. Һыуҙы зарарһыҙландырыу.*

**ЗАРАРҺЫҘЛАНЫУ** *к.* Зарарһыҙ булыу, зарарһыҙға әйләнеү. *Агын йылға үҙенән-үҙе зарарһыҙлана.* / Ҡурҡынысһыҙ, хәүефһеҙ булыу. *Зарарһыҙланган химик бомба.*

**ЗАРАРҺЫҘЛАУ** *к.* Зарарһыҙға әйләндереү, зарарһыҙ итеү. *Зарарлы матдәләрҙе зарарһыҙлау.* / Ҡурҡынысһыҙ, хәүефһеҙ итеү. *Мина яланына килеп еткәс, улар йәшерелгән миналарҙы зарарһыҙланылар, алга барырга юл астылар.* Р. Низамов.

**ЗАРБА** [*гәр.*] *и. иҫк. кит.* **1.** Һуҡҡан, бәргән көс; һуғылыш, бәрелеш. *Алтын башлы ниндәйҙер ук зарбаһынан үлеп калган икән тип белде инде.* «Бабсаҡ менән Күсәк».

**2.** *күсм.* Көтмәгәндә килеп сыҡҡан бәхетһеҙлек, бәлә; ҡайғы-хәсрәт. *Хәбибә еңгә Хәйбрахман байҙан үкереп илап сыгып китте. .. Шул каты зарба эсендә өйөнә кайтып йыгылды.* Д. Юлтый. *Ул газаптарҙан шулай ҙа ауманым тормаҫ булып, зарбаларҙың һәр беренә каршы тороп ашкынып.* Ғ. Иҫәнбирҙин. **Зарба ороу** (*йәки* яһау) бәхетһеҙлеккә юлыҡтырыу; ҡайғы-хәсрәт килтереү. *Ҡулымда бар минең утлы сукмар хаиндарга зарба орорлок.* Х. Ғәбитов.

**ЗАРБАЛЫ** *с. иҫк. кит.* Бәләле, хәсрәтле. *Зарбалы тормош.*

**ЗАРИ** [*фарс.*] *с. иҫк. кит.* Оло хәсрәтле; ҡайғылы. *Һәмишә* [*япрактар*] *булалыр һары, мин дә шулай зариҙарҙан* (Мөнәжәттән).

**ЗАРИЛЫҠ** *и. иҫк. кит.* Ҡайғы-хәсрәтле хәл. *Бик ҙур шатлыҡ булыр ине илемә кайтһам. Хаҡ тәгәлә коткарыр микән, салауат әйтһәм. Зарилыкта гүмерҙәрем үтәр имде* (Бәйеттән).

**ЗАР-ИНТИЗАР** [*фарс.* + *гәр.*] *с.* Нимәгәлер бик ныҡ мохтаж. *Зар-интизар бит ул гүмер буйы бер рәт кенә якты күрергә.* М. Ғафури

♦ **Зар-интизар булыу** бик ныҡ көтөү; тилмереү. *[Зөлхизә — көтөүсегә:] Мин Зөлкәрнәйҙе бер күрергә зар-интизар булып йәшәйем.* Н. Иҙелбай. **Зар-интизар итеү** бик ныҡ көттөрөү; тилмертеү.

**ЗАРИР** [*гәр.*] *с. иҫк. кит.* Тома һуҡыр. *Ни калһын көндөң нурын ул бер зарир.* Аҡмулла.

**ЗАРИСО́ВКА** [*рус.*] *и.* **1.** Мәҡәлә итеп әҙерләнгән яҙма. *Зарисовка баҫып сыгарыу.* ■ *Шәрифйән эштән һуң үҙенең пландарын, уйҙарын, күргәндәрен дөйөмләштереп, мәкәлә, зарисовка һәм репортаждар яҙа.* Ф. Мөхәмәтйәнов.

**2.** Натуранан яһалған рәсем, һыҙма. *Зарисовка менән мауыгыу. Зарисовка яһау.*

**ЗАРҠЫНЫУ** *к. диал.* Зарығыу. *Зыркынган күңел оса киңлеккә.* Д. Юлтый.

**ЗАРҠЫТЫУ** *к. диал.* Зарыҡтырыу. *Һукты көткән еңеү сәгәте, ирештек заркыткан теләккә.* С Ҡудаш.

**ЗАРЛАНДЫРЫУ** *к. йөкм. кар.* **зарланыу.**

**ЗАРЛАНЫУ** *к.* Риза булмай зарҙы белдереү; ҡайғы, хәсрәтте кемгәлер еткереү. *Зарланып йәшәү. Зарланып һөйләү.* ■ *Йылдарым япраktай койола, тик зарланыр юк зарым.* М. Кәрим.— *Ҡайҙан килеп төштөң һуң әле һин! — ти батша зарланып* (Әкиәттән). | Кешенең кәмселегенән, насар яғынан ризаһыҙлыҡ белдереп яманлау, һуҡраныу. *Килендән зарланыу.* ■ *Ғата агай .. заир мулланан зарланырга тотондо.* А. Карнай.

**ЗАРЛАНЫШЫУ** *к. урт. кар.* **зарланыу.**

**ЗАРЛАТЫУ** *к. диал.* Зарландырыу.

**ЗАРЛАУ** [1] *к.* Ҡайғырыу, хәсрәтләнеү. *Зарлап илау.* ■ *Зарлап йөрөп үтте гүмерҙәрем, донъя рәхәткәйен күрмәнем* (Халыҡ йырынан).

**ЗАРЛАУ** [2] *и.* Хәсрәт, зар белдереп йырлаған йыр. *Олатайымдың һугыш йылдарында сыгарган зарлауҙарын яҙып алдым.*

**ЗАРЛЫ** *с.* **1.** Зары, хәсрәте бар; ҡайғы-хәсрәтле. *Зарлы гүмер. Зарлы кеше.* // *Ғүмере зарлы. Зарлы үткән гүмер.* ■ *Өмәт һәр кисен Әптерәш агай өйөнә йыйылып әңгәмә һатып ултыра торган зарлылар янына килә ине.* Д. Юлтый. *Урам буйлап йәш колон зарлы кешнәп сабып йөрөй.* Ф. Иҫәнғолов. *Зарлы көйгә һал да, дуҫым, тарт, сикылдат гармуның.* Ш. Бабич.

**2.** Нимәгәлер ныҡ мохтаж. *Белемгә зарлы. Бер күрергә зарлы.* ■ *Етем бала һымак зарлы йәрен тапмаган йөрәк.* А. Игебаев.

● *Ярлы көнө зарлы булыр.* Әйтем.

**ЗАР-МОҢ** *и. йыйн.* Күңелдәге ауыр кисереш; зарлы моң; ҡайғы-хәсрәт. *Күпме мазлум йәше аҡты һинең золомоң менән? Күпме бәндә кипте, үлде, һаргайып зар-моң менән.* М. Ғафури.

**ЗАРПЛА́ТА** *и. һөйл.* Эш хаҡы.

**ЗАРУР** [*гәр.*] *с.* **1.** Бик кәрәкле, бик мөһим; мотлаҡ. *Зарур булыу.* ■ *Ҡоштарга киңлек кәрәк. Бөркөткә бының өҫтөнә бейеклек тә зарур.* Ә. Харисов. *Бер зарур йомошоңа барайым тиһәң, ат табып булмай.* Ғ. Ниязбаев.

**2.** Башҡаса мөмкин булмаған; мәжбүри, тейешле, мотлаҡ. *Тәбигәттәге зарур бәйләнеш.*

**ЗАРУРАТ** [*гәр*] *и.* **1.** Бик кәрәклек, сараһыҙлыҡ. *Оҙаҡ оборонала тороу ул атлы гәскәр эше түгел, йәйәүле уксылар эше. Заруратган шулай куялар инде.* С. Әлибаев. *Ғәббәс мулланың .. катынын иң садиk аркалаш вә тереклек мәшәкәттәрендә иптәш вә серҙәш тип белеү заруpат булмаганда, хажи кыҙын һорамак ихтималы юк ине.* Р. Фәхретдинов.

**2.** Башҡаса мөмкин булмаған хәл; мәжбүри, мотлаҡ сара. *[Мулла — Мәһирәгә:] Кыш көнө һиңә лә һыуык тейгән, миңә лә. Бына был заруpат.* И. Насыри.

**ЗАРУРИ** [*гәр.*] *с.* **1.** Бик кәрәк[ле], мотлаҡ; зарур. *Бөтә кешенең дә яҙыусы булыуы заруpи түгел.* Ә. Харисов.

**2.** *филос.* Ҡанун рәүешендәге; мәжбүри. *Заруpи күренеш. Заруpи рәүештә.* ■ *Вульгар социализмдан котолоу, әлбиттә, бик заруpи бер хәл булды.* К. Әхмәтйәнов.

**ЗАРУРЛЫҠ** *и. кар.* **зарурат** 1.

**ЗАРУТ** *и. диал.* Эҫкерт. *Зарут-зарут бесән.*

**ЗАР-ҺАҒЫШ** *и. йыйн.* Хәсрәт, һағыш хисе;

зар-моң. *Салауат та батыр илдән киткәс, йөрәктәрҙе баҫты зар-һағыш* (Халыҡ йырынан)

**ЗАРЫҒЫТЫУ** *к. диал.* Зарыҡтырыу.

**ЗАРЫҒЫУ** *к.* **1.** Хәсрәткә, ҡайғыға ҡалыу. *Бәхетһеҙ башын ҡайҙа ҡуйырға белмәй һаман зарығып, һарыға һабышҡан Зөлхизә .. ҡырға, тәбиғәт киңлегенә сығып булған.* Н. Иҙелбай. *[Көҙгө елдәр] әллә Гөлъямалды, элеккеләй зарығып, моңайып тип уйлайҙар.* З. Биишева.

**2.** Бик ныҡ теләү, тилмереү. *Зөлхизә .. улының һалдаттан ҡайтҡанын көндәрен һанап, зарығып көттө.* Н. Мусин. *Бик һағынып, дуҫҡай, бик зарығып, һиңә генә яҙҙым был хатты* (Халыҡ йырынан).

**ЗАРЫҒЫШЫУ** *к. урт. ҡар.* **зарығыу**.

**ЗАРЫҠ: зарыҡ булыу** *һөйл.* мохтаж булыу; тилмереү.

**ЗАРЫҠТЫРЫУ** *к.* Бик ныҡ көттөрөү; зар--интизар итеү, тилмертеү. *Хат яҙмай зарыҡтыра.* ■ *Атай, касан атырға өйрәтәһең инде? — тинем, ялынған тауыш менән. Әсәйем бер миңә, бер атайыма ҡарап алды ла: — Ниңә зарыҡтыраһың баланы? — тине.* Ә. Зәйнуллин. *Бик һағындым һине, бик һағындым, зарыҡтырҙың инде, һөйөклөм.* Ш. Бикҡол.

**ЗАРЯ́Д** [*рус.*] *и.* **1.** *ҡар.* **яһаҡ** [1].

**2.** *физ.* Есемдәге электр энергияһының миҡдары. *Кире заряд. Ыңғай заряд. Электр заряды.*

**ЗАРЯ́ДКА** [*рус.*] и. Тәнде сыныҡтырыу маҡсатында яһалған физик күнекмә. *Иртәнге зарядка.* ■ *Рамазан бүлмә тәҙрәһен ҙур итеп асып ебәрҙе лә, .. зарядка яһаны.* Ә. Вәли.

**ЗАРЯДЛЫ** *с.* **1.** *ҡар.* **яһаҡлы** [1]. *Зарядлы мина. Зарядлы снаряд.*

**2.** *физ.* Электр заряды булған. *Кире зарядлы өлөшсәләр. Ыңғай зарядлы өлөшсәләр.*

**ЗАРЯДЛАНЫУ** *к.* Электр энергияһы алыу. *Аккумулятор зарядланған. Зарядланған өлөшсәләр.*

**ЗАРЯДЛАУ** *к.* Электр энергияһы биреү, зарядлы итеү. *Аккумуляторҙы зарядлау. Батареяны зарядлау.*

**ЗАСА́ДА** [*рус.*] *и.* **1.** Ҡоралл төркөмдөң боҫҡан ерҙән көтмәгәндә һөжүм итеү ысулы. *Танк засадаһы. Засада ҡороу.* ■ *Партизандар юлдарға мина ҡуя, засадалар ойоштора, хәрби постарға һөжүм итә.* «Совет Башҡортостаны», 1965, 4 сентябрь.

**2.** Көтөлмәгән һөжүм өсөн хеҙмәт иткән йәшерен урын. *Засаданан һөжүм итеү. Эскадронды засадаға ҡуйыу.*

**3.** Шунда йәшеренеп, һөжүмгә әҙер торған ҡоралл төркөм. *Засада ҡуйыу.* ■ *Ике төркөм дә дошман засадаһына эләгеп, бойороҡто үтәй алмай һәләк була.* Ә. Ихсан.

**ЗАСЕДА́ТЕЛЬ** [*рус.*] *и.*, **халыҡ заседателе** Судта енәйәт йәки граждандарҙың эшен ҡарауҙа ҡатнашыу өсөн законлы тәртип нигеҙендә һайлап ҡуйылған кеше. *Халыҡ мәхкәмәһе составына даими бер хаким менән нәүбәттәге ике заседатель инә.* «Совет Башҡортостанының ун йылы", 1929. *Халыҡ заседателдәре суд эштәрен ҡарағанда судъяның бөтө хоҡуҡтары менән файҙалана.* Башҡорт АССР-ының Конституцияһы, 1984.

**ЗАСЛО́Н** [*рус.*] *и.* Хәрби операцияны ышыҡлау өсөн ҡуйылған ғәскәр. *Заслон ҡалдырыу.* ■ *Заслонда торған кавалеристар атлы стройҙа гитлерсыларға ябырылдылар.* Ә. Ихсан.

**ЗАСТА́ВА** [*рус.*] *и.* **1.** Дәүләт сиген һаҡлаған ғәскәри төркөм һәм шул төркөм урынлашҡан урын. *Сик буйы заставаһы. Заставаға барыу.*

**2.** Ял ваҡытында йәки маршта төп көстәрҙе һаҡлаған ғәскәри төркөм. *Заставала барыу. Заставала тороу.* ■ *Шадрин алға бер застава ҡуйырға кәңеш итте.* А. Таһиров.

**ЗАТ** [*ғәр.*] *и.* **1.** Быуын-быуындан килгән ҡан ҡәрҙәш; нәҫел. *Заты яҡшы. Насар заттан. Сит зат. Затты ҡыуыу. Заты ҡороу.* ■ *[Алпамыша:] Алпамыша тигән атым бар, батыр тигән затым бар* (Ҡобайырҙан). *Үҫкән икән гүзәлкәйем затына бераү генә* (Халыҡ йырынан).

**2.** Төп билдәләре дөйөм булған нәмә һ. б. төркөмө. *Әҙәм заты. Мал заты.* ■ *Торомбайҙың яуға менгән аты толпар затынан булған* (Әкиәттән). / Енес. *Ир заты. Ҡатын-ҡыҙ заты.*

**3.** Матди сифаты булған есем; нәмә. *Аҫыл зат. Ҡиммәтле заттан.* ■ *Бейә һөтөнөң заты уның ашаған үләненә ҡарап йөрөй.* М. Ғәбәйҙуллин. / Ҡиммәтле, баһалы нәмә. *Байҙар форсат табып аслыҡтан, заттар йыя артыҡ игенгә.* Д. Юлтый. *Баҙарҙа бер сумка затын юғалтып ҡайтҡан.*

**4.** Ниндәйҙер сифаты менән айырылып торған шәхес; кеше. *Билдәле зат. Оло зат. Яуыз зат.* ■ *Һинең кеүек зат һис ваҡыт кәлбен ғорурға ашламаҫ.* Ш. Бабич.

**5.** *күсм.* Нимәнеңдер шауҡымы, тәьҫиренән ҡалған эҙ. *Яҡшының һүккән менән аты китмәҫ, яман һүҙҙең күңелдән заты китмәҫ.* Аҡмулла.

**6.** *эйл. ф.* Юҡлыҡ күрһәткесе һәм ла киҫәксәһе менән килеп, ниҙеңдер бөтөнләй булмауын йәки юҡҡа сығыуын күрһәтә; эҫәре. *Таҡтаның затын да тапмаҫһың. Һыуҙың заты ла юҡ.* ■ *Өй эсендә алып ҡулға тоторлоҡ сепрәк заты ла юҡ бит.* Б. Бикбай. *Тап-таҡыр ялан. Бер генә ағас заты ла күренмәй.* Ә. Ихсан.

**7.** *грам.* Эш-хәрәкәттең һөйләүсегә мөнәсәбәтен белдергән грамматик категория. *Беренсе зат. Икенсе зат. Өсөнсө зат. Зат алмашы. Зат ялғауы. Эйәлек заты.*

◆ **Ғали зат** юғары синыф кешеһе; аҡһөйәк. *Яуыз йәндәр һәм дә ғали заттар беҙҙең юлға кәртә һалмаһын.* Ғ. Хәйри. **Заты ҡороғор** эрләгәндә әйтелә.

● *Ит яҡшыһы — ҡарта, зат — затына тарта.* Әйтем.

**ЗАТВО́Р** [*рус.*] *и.* Төрлө машина, ҡорал-ҡmoralдың ауыҙын, көбәген, асып яба торған ҡулайлама. *Фотоаппарат затворы. Мылтыҡ затворы. Туп затворы.* ■ *Ҡом тулһа, рус винтовкаһының затворын асыу, ябыу эше аткан һайын ауырая.* Д. Юлтый.

**ЗАТ-ЗАМИР** *и. йыйн. диал.* Нәҫел-нәсәп.

**ЗАТ-ЗӘҮЕР** *и. йыйн. диал.* Нәҫел-нәсәп. *Беҙҙең зат-зәүер — ярлы-крәҫтиән.* К. Кинйәбулатова.

**ЗАТЛАШЫУ** *к.* Ҡыҙ алып, ҡыҙ бирешеү; ҡоҙалашыу, туғанлашыу.

**ЗАТЛЫ** *с.* **1.** Баһаһы ҡиммәт; ҡиммәтле, баһалы. *Затлы нәмә. Затлы металл.* ■ *Арыу иттем әле, алдап бер затлы нәмәһен алдым* (Әкиәттән).

**2.** Юғары сифатлы. *Затлы тауар. Затлы баршау.* ■ *Һиңә тигән ебәк күлдәклектең иң затлыһын икәү алырбыҙ.* Ә. Атнабаев. / Иң яратҡан, күңелгә ятҡан. *Затлы аҙыҡ.* ■ *Кисә Мәхмүзә ауыл ашының иң затлыһы һәм иң татлыһы — тултырған тауыҡ менән һыйланы.* Д. Исламов.

**3.** Юғары дәрәжәле; абруйлы. *Затлы ир.* ■ *Ҙур йомошка ебәрәләр ирҙәрҙең иң затлыһын.* М. Кәрим.

● *Затлының һүҙе татлы.* Әйтем. *Татлынан татлы — яҡшы һүҙ, затлынан затлы — яҡты йөҙ.* Әйтем.

**ЗАТО́Н** [*рус.*] *и.* Оло йылғаның ҡултығындағы караптар ҡышлай торған урын. *Өфө затоны.* ■ *Ситлеккә ултыртылған ҡош һымаҡ, пароход тағы ла затонга инеп бикләнде.* И. Насыри.

**ЗАТО́Р** [*рус.*] *и. ҡар.* **тығын** [1] 1, 2. *Шул арала өҫ яҡтан эркелеп килгән һыу өйөрмәһе затор өҫтөнә ябырылды.* Ғ. Вәлиев.

**ЗАТТАШ** *и.* Бер үк зат (1 мәғ.) кешеһе, нәҫелдәш; туған.

**ЗАТҺЫҘ** *с.* **1.** Ҡан-ҡәрҙәше юҡ, нәҫел-нәсәпһеҙ. *Затһыҙ егет. Затһыҙ килен.*

**2.** Сифаты насар йәки түбән. *Затһыҙ тауар. Затһыҙ кейем.*

**3.** Дәрәжәһе юҡ, абруйһыҙ; бәҫһеҙ. *[Егет — Маҡтымһылыуға:] Атам аҫылһыҙ түгел — ил тотҡан аҡһаҡал Көсөкбай, үҙем затһыҙ түгел — дан танылған Әбләс.* «Маҡтымһылыу».

● *Затһыҙҙың ғүмере — татһыҙ.* Әйтем.

**ЗАТ-ЫРЫУ** *и. йыйн.* Нәҫел-нәсәп, туған-тумаса. *[Саттар:] Зат-ырыуҙа ғалим булғаны юҡ ине, фән буйынса китте бер улым.* С. Кулибай.

**ЗАТ-ЫРЫУҺЫҘ** *с.* Нәҫел-нәсәпһеҙ, туған-тумасаһыҙ. *Зат-ырыуһыҙ кеше.*

**ЗАУ** *и.* Ҡайғы, хәсрәт. *Әҙрәкәгә шау һалды, көтмәгән бер зау һалды.* «Урал батыр».

**ЗАУЫҒЫУ** *ҡ.* Хәсрәткә ҡалыу, зар-моңға сумыу. *Зауығып ултырыу.*

**ЗАУЫҠ** [*ғәр.*] *и.* **1.** Матурлыҡты, күркәмлекте тойоу, аңлау һәм уны баһалай белеү һәләте. *Юғары зауыҡ. Сәнғәткә булған зауыҡ. Зауыҡ менән эшләү. Зауыҡ белеп кейенеү. Зауыҡ тәрбиәләү. Зауыҡ уяныу.* ■ *Беҙ үҙебеҙ иреткән коростоң сифатын күтәрә барабыҙ, үҙебеҙҙе кешелек матурлығының зауыҡ юғарылығына алып менәбеҙ.* М. Хәйҙәров. *Бына был курсанттар егеттәр, исмаһам! Ҡайһылай зауыҡ менән кейенеп алғандар.* Ф. Исәнғолов. *Зауыҡ менән биҙәлгән зал ысынлап та тылсымлы әкиәт донъяһын хәтерләтә.* «Совет Башҡортостаны». 1986, 10 июнь.

**2.** Рухи ләззәт, кинәнес; рәхәтлек, ҡәнәғәтлек. *Күңел зауығы. Зауыҡтан мәхрүм. Зауыҡ алыу. Көндәлек зауыҡҡа бирелеү. Зауыҡ табыу.* // *Зауыҡ көндәр.* ■ *Бабич үҙенең иң яҡшы йырҙарын дан өсөн дә, зауыҡ өсөн дә түгел, ә ысынлап та алтын иле өсөн, үҙ туған халҡы өсөн йырланы.* Ә. Харисов. *[Ҡарлуғас:] Старшина өсөн кешене интектереү шулай зауыҡ булғас, беҙ ни эшләй алабыҙ.* Б. Бикбай. *Борсолоуҙар, уйҙар, кисерештәргә тулы көндәр, зауыҡ йылдарҙы йөрәк менән генә тойоу етмәй, ҡабартмайса эштә ҡулдарҙы.* М. Тажи.

**3.** Рухи теләк, ынтылыш; көслө дәрт, рух, илһам. *Зауыҡты баҫыу. Зауыҡты ҡуҙғытыу. Зауыҡты ҡәнәғәтләндереү. Үҙ зауҡың менән йәшәү.* ■ *Әлимә ҡыҙҙар араһында уҡыу тураһында һүҙ алып бара башланы. Уларҙа уҡыуға зауыҡ тыуҙырырға тырышты.* Д. Юлтый. *Яңы закон миңә бигерәк яҡын, нык күтәрҙе минең зауҡымды.* Б. Вәлит. *Һөйгән дә йәрем тоғро булһа, һөйөр инем зауҡым ҡанғанса* (Халыҡ йырынан). / Нимәгәлер тартым көсө, әүәҫлек. *Һин йәки юрамал ҡыланған булаһың, йәки зауҡың бөтөнләй юҡ.* М. Кәримов. *Ә шулай ҙа ҡағыҙ-ҡәләмде ҡуймайым мин — зауҡым ҡуйҙырмай.* Ғ. Ғүмәр.

♦ **Зауыҡ булыу** әүәҫ булыу. *[Мәсемхан] ғәскәр менән сәхрәлә сауҡ ҡылған, үҙе уйын уйнауға зауыҡ булған.* «Бабсаҡ менән Күсәк». **Зауыҡ итеү** нык теләү; дәрт итеү.

**ЗАУЫҠЛАНДЫРЫУ** *ҡ.* **1.** Матурлыҡ, күркәмлектән тәм, йәм табыу тойғоһо уятыу; зауыҡ тыуҙырыу. *Ғафури үҙенең ижады менән ике яҡты ла — башҡортто ла, татарҙы ла бер юлы зауыҡландыра, рухи ҡәнәғәтләндерә алғаны өсөн уртаҡ аҙип.* Ә. Харисов.

**2.** Рухи ләззәт, кинәнес биреү; рәхәтлек, ҡәнәғәтлек тойғоһо уятыу; зауыҡ биреү.

**3.** Рухи теләк, ынтылыш тыуҙырыу; көслө дәрт, илһам биреү; зауыҡты уятыу.

**ЗАУЫҠЛАНЫУ** *ҡ.* **1.** Матурлыҡ, күркәмлектән тәм, йәм табыу тойғоһо уяныу; зауыҡ тыуыу. *Зауыҡланып күңел күрлөгөнән, йөрөп ҡайтыр өсөн ил күреп, сығып китте бер көн Аҡназар бай.* М. Тажи.

**2.** Рухи ләззәт, кинәнес табыу; рәхәтлек, ҡәнәғәтлек тойғоһона бирелеү. *Тылсымлы донъяла мин зауыҡланып йәшәй инем йәйге аҡ сәскә һымаҡ.* А. Игебаев. *Атлылар тыуған яҡтың моңло көйҙәрен зауыҡланып тыңлайҙар. Барыһының кәйефе күтәрелеп китә.* «Һәнәк», 1968, № 4.

**3.** Рухи теләк, ынтылыш, көслө дәрт тыуыу; илһамланыу, рухланыу. *Башҡортостанды үҙ күҙе менән күргән бөтә яҙыусылар .. уны берҙәй һоҡланып һәм зауыҡланып һүрәтләгән.* Ә. Харисов. *Сәғиҙә .. ауылдың үҙенә генә хас йолаһы, йыр-моңо менән зауыҡланды.* М. Тажи.

**ЗАУЫҠЛЫ** *с.* **1.** Зауыҡ (1 мәғ.) менән эшләнгән; матур, күркәм. *Зауыҡлы архитектура комартҡыһы.*

**2.** Зауыҡ (2 мәғ.) биргән, тыуҙырған, рухи ләззәт биреп, күңелде күтәргән. *Өйгә инеү менән мине шундай зауыҡлы бер толҡалыҡ солғап алды — бүлмәләр айырыуса бер күркәмлек менән йыйыштырылған.* Н. Иҙелбай.

**3.** Зауыҡ (3 мәғ.) уятҡан, биргән; дәртле, рухлы, илһамлы; күңелле. *Зауыҡлы йыр. Зауыҡлы йәшлек.* // *Зауыҡлы йәшәү.* ■ *Был донъяҡайҙарҙың зауыҡлы сағы ағай-эне теүәл саҡта икән* (Халыҡ йырынан).

**ЗАУЫҠТЫРЫУ** *ҡ. ҡар.* **зауыҡландырыу.**

**ЗАҺИЛ** [*гәр.*] *с. иҫк. кит.* Ҡаушап ҡалыусан; ҡурҡаҡ. *Заһил кеше. // Ғәскәр бит, төрлө кеше бар, тик уларҙың ауырлығы бөтә полкка төшә. Хоҙай быңдай заһилдарҙан үҙе һаҡлаһын.* Н. Ҡәрип.

**ЗАҺИР** [*гәр.*] *с. иҫк. кит.* **1.** Яҡты, нурлы. *Заһир булыу.* ■ *Заһир булһа алдында ут йәки ҡаплап китһә сил, гәйрәт итеп сикмәгә сәд һәр даим әҙер булыр.* С. Яҡшығолов.

**2.** Күренеп торған; асыҡ, билдәле. *Уның кем икәне заһир.* ■ *Хәшиә гәләмәте шунан заһир, дин биреп донъя һатып алмағанда.* Аҡмулла. *Беҙҙә юкмы күрә алмаған хаҡлыҡ нурын: ҡояш кеүек заһир булған хәҡиҡәткә шәхес өсөн ҡаршы төшөп, килә ҡырын.* М. Ғафури.

**3.** (*баш хәреф менән*) Ир-ат исеме.

♦ **Заһир булыу** барлыҡҡа килеү, ғәмәлгә ашыу; күренә башлау. *1683 йылда Минзәлә тирәһендә йәнә башҡорт фетнәләре заһир булды.* М. Һаҙыев. *Әҙәбиәтебеҙҙә, хикәйә вә романдар заһир була башлағандан бирле һәнүз, бер төрлө яҙыу бара.* Ғ. Рафиҡи.

**ЗАЧЁТ** [*рус.*] *и.* Юғары йәки махсус урта мәктәптәрҙә практик белем кимәлен тикшереү һынауының бер төрө. *Зачёт биреү. Зачётка әҙерләнеү.* ■ *[Институтта] дүрт йыл интектергән зачёттарҙы һәм профессор һине һағынам.* М. Хәй. **Зачёт сессияһы** студенттарҙан һынау ала торған осор. *Ҡышҡы зачёт сессияһы. Йәйге зачёт сессияһы.* / *һөйл.* Шул һынауҙы тапшырғанды белдергән билдә. *Зачёт ҡуйыу. Зачёт алыу.* **Зачёт книжкаһы** студенттың тапшырған һынауҙарын билдәләп бара торған документ.

**ЗАЧЁТКА** [*рус.*] *и. һөйл.* Зачёт книжкаһы (*ҡар.* **зачёт**). *Рәхәт тә һуң, һынау һуңынан зачётканды тотоп балҡып сығыу, ҡотланыуың дуҫтар ҡулынан.* Р. Ғарипов.

**ЗАЩИ́ТНИК** [*рус.*] *и. ҡар.* **яҡлаусы** 1.

**ЗАЯ** [*гәр.*] *с.* Әрәмгә, бушҡа үткән (ваҡытҡа ҡарата]. *Зая булыу. Зая итеү. // Ғүмер зая үтеү.* ■ *[Хәким:] Заяға үтте ғүмер, бай тупһаһын тапап байып булманы.* Ф. Иҫәнғолов. *Үлем килер, ләкин шул саҡта ла зарһыҙ булһын һуңғы өндәрем. Әйтһәм ине: «Минең ғүмеремдә булманы тип, зая көндәрем».* Ш. Биҡҡол.

**ЗАЯ́ВКА** [*рус.*] *и.* Низер һорап алдан бирелгән рәсми ҡағыҙ. *Коллектив заявка. Заявка алыу. Заявка биреү.*

**ЗВА́НИЕ** *и.* **1.** *ҡар.* **дәрәжә.**

**2.** Күрһәткән хеҙмәт батырлығы өсөн бирелгән маҡтаулы исем. *Советтар Союзы Геройы званиеһы бирелде. Социалистик Хеҙмәт Геройы званиеһына лайыҡ булды.*

**ЗВЕНО́** [*рус.*] *и.* **1.** Хужалыҡтың, бер ойошманың һ. б. иң бәләкәй берәмеге. *Баҫыусылыҡ звеноһы. Пионер звеноһы. Сөгөлдөрсөләр звеноһы. Звено ағзаһы. Звено башлығы.* ■ *Тындары бөтөп отделение командиры инде: «Тарас! Звеноңды секретҡа әҙерлә. Немецтар бик ҡаты ут асты. Һөжүмгә күсеүҙәре ихтимал.* Д. Юлтый.

**2.** *күсм.* Бөтөн нәмәнең бер өлөшө. *Хужалыҡты үҫтереү эшенең төп звеноһы.* ■ *Б. Бикбайҙың «Ҡарлуғас», «Салауат» тарихи драмаларын Пугачев восстаниеһы тарихын асыуҙа бер мөһим звено тип ҡарарға мөмкин.* М. Ғималова.

**ЗВЕНЬЕВО́Й** [*рус.*] *и. һөйл.* Звено башлығы.

**ЗВЕРИ́НЕЦ** [*рус.*] *и. һөйл.* Тамаша өсөн ҡырағай йәнлектәрҙе йыйып тотҡан, махсус йыһазландырылған урын йәки бина. *Ҡалаға зверинец килгән, барып ҡарарға ине. Бик ҡыҙыҡлы хайуандар килгән, тиҙәр.* С. Агиш.

**ЗВОНО́К** [*рус.*] *и.* **1.** *ҡар.* **сыңғырлаҡ.** *Электр звоногы.*

**2.** Сыңғырлаҡ менән бирелгән сигнал. *Звонок булды, дәрес бөттө.*

**ЗЕБЕРЛӘТЕҮ** *к. диал.* Земберләтеү.

**ЗЁБРА** [*рус.*] *и.* Һыҙат-һыҙат төшкән аҡлы-ҡаралы ҡырағай Африка аты.

**ЗЁБУ** [*рус.*] *и.* Азия менән Африкала таралған йорт хайуаны; бөкрө үгеҙ.

**ЗЕКЕР** [*гәр.*] *и. иҫк.* **1.** Алла исемен ҡат-ҡат ҡабатлауҙан торған доға. **Зекер әйтеү** алланы ҙурлап, маҡтап доға уҡыу. *Тәсбих тартып зекер әйтеү.* ■ *Ҡайһы бер кеше ҡиблаға ҡаршы ултырып зекер әйтә.* М. Ғафури. / Аллалай күреп хөрмәт иткән, табынған нәмәгә ҡарата. *Зекерем һин, Урал, тәсбихем һин, Урал тиермен гүргә кергәндә* (Халыҡ йырынан).

**2.** (*баш хәреф менән*) Ир-ат исеме.

□ **Зекер булыу** иҫтә тотолоу, иҫкә алыныу. *Һиммәтем зекер булһын.* М. Өмөтбаев. **Зекер итеү** (*йәки* **ҡылыу**) 1) иҫтә тотоу, иҫкә алыу. *[Сөләймән карт:] Мин кеше менән һуғышҡан саҡта ла .. алла һуҙҙәрен зекер итәм.* Ғ. Хәйри; 2) телгә алып әйтеү. *[Килмәк:] Хәҙер бән бында килеүемдең сәбәбен зекер итеүҙе муафиҡ күрәм.* Ғ. Ибраһимов.

**ЗЕКРИ** [*гәр.*] *с. иҫк.* Данлы, маҡтаулы. *Бер мәләк тә ҡаҡмаһын зекри ҡанатын өн менән.* Д. Юлтый.

**ЗЕЛ** [*рус.* зелье] *и.* Ҡаты эсемлек. *Бал ҡатыш ҡымыҙҙың шауҡымы .. зильскийҙең башын зел кеүек ауырайтты.* Ғ. Дәүләтшин.

**ЗЕЛПЕ** *и.* Муйыл япраҡлы, ваҡ ҡыҙғылт сәскәле, ҡара емешле ҡыуаҡ. *Киң япраҡлы зелпе. Ҡара зелпе.*

**ЗЕЛТЕРӘҮ** *к. диал. ҡар.* **дерелдәү 1.** *Өшөп зелтерәү.*

**ЗЕМБЕР** *окш.* **1.** Бик ваҡ тулҡын хәрәкәтен белдергән һүҙ. *Һыу өҫтө зембер итеп китте.*

**2.** Тән буйлап леберләтеп үткән хисте белдергән һүҙ. *Тәнем зембер итеп китте.*

**ЗЕМБЕРЛӘТЕҮ** *к.* **1.** Ваҡ-ваҡ ҡына тулҡынландырыу. *Ел күл өҫтөн земберләтә.* ■ *Һыуға төштөк. Яр буйына йыйылған ваҡ сабаҡтар һыуҙың өҫтөн земберләтеп тирә-яҡҡа һирпелде.* Н. Мусин.

**2.** Эҫеле-һыуыҡлы итеү, дерелдәтеү (тәнгә ҡарата). *[Команда] йөрәктең әллә ҡайһы еренә дөп итеп барып бәрелә лә тәнде земберләтеп ебәрә. Ярһып та, уҙ-уҙеңде юғалтып та ҡуяһың уны ишеткәс.* Н. Ҡәрип.

**ЗЕМБЕРЛӘҮ** *к.* **1.** Ваҡ-ваҡ ҡына тулҡынланыу йәки тулҡынған һымаҡ итеү. *Әкрен елгә күл өҫтө земберләп ята.*

**2.** Эҫеле-һыуыҡлы булыу, дерелдәү (тәнгә ҡарата). *Бер генә секундҡа пограничниктың тәне земберләп китте, ләкин тиҙ үк үҙен ҡулға алды.* Д. Бүләков. *Айыу һунарсыларҙы күргәс,*

*колак яргыс тауыш менән акырып ебәргән. Тегеләрҙең тәндәре земберләп киткән* (Әкиәттән).

**ЗЕМЛЕМЕ́Р** [*рус.*] *и.* Ер бүлеү, межа һалыу эшен башҡарған хеҙмәткәр. *Землемер баганаһы.* ■ *Рус землемеры Николай Ремезов үҙенең «Кырагай Башкортостан тормошонан очерктар» тигән китабында башкорт ерҙәренең нисек талап алыныуы тураһында кот оскос күренештәрҙе яҙа.* Б. Юлдашбаев.

**ЗЕМЛЯ́НКА** [*рус.*] *и.* Ерҙе ҡаҙып эшләгән торлаҡ; баҙ өй. *Землянка каҙыу. Землянкала тороу.*

**ЗЕ́МСКИЙ** [*рус.*] *и. тар.* Земство башлығы. *Староста тип ни, бер уның кулынан килә торган эш тиһеңме ни? Земский куша. Земскийга югарынан кагыҙ килә.* Һ. Дәүләтшина.

**ЗЕМСНАРЯ́Д** [*рус.*] *и.* Һыу төбөн тәрәнәйткәндә, гидротехник ҡоролмалар төҙөгәндә һыу төбөнән ерҙе һурып йәки һоҫоп ала торған техник флот карабы.

**ЗЕ́МСТВО** [*рус.*] *и.*, **земство идараһы** *тар.* Революцияға тиклемге Россияла ҡайһы бер үҙәк губернияларҙа булған хоҡуҡ яғынан нык сикләнгән урындағы идара. *Земство йыйылышы. Өйәҙ земствоһы.* ■ *Реформа осоронда Ырымбур һәм Өфө губерналарында үҙ аллы идара органдары булган земство учреждениелары барлыкка килде.* Б. Юлдашбаев.

**ЗЕНИ́Т**[1] [*рус.*] *и. астр.* Күк күмбәҙенең баш осонда күренгән иң юғарғы нөктәһе.

**ЗЕНИТ**[2] [*рус.* зенитный] *с. хәрби* Һауалағы дошман самолёттарына һ. б. ата торған. *Зенит артиллерия. Зенит батарея. Зенит туп.* ■ *Йылганың һул ягында 37 мм-лы зенит орудие ултыра. Орудие расчёты, тягач ватылганлыктан, яланда тороп калган икән.* Ә. Ихсан.

**ЗЕНИ́ТКА** [*рус.*] *и. һөйл.* Зенит туп. *Куршеләге зениткалар тытылдай, эргәлә генә, ерҙе уҫал йолкколап, бомбалар ярыла.* Ш. Янбаев. *Платформала, күкте аулап, ҙур зенитка короллан.* Я. Ҡолмой.

**ЗЕНИТСЫ** *и.* Зенит ҡоралынан атҡан хәрби кеше; зенитчик. *Зенитсы дошман самолетын бәреп төшөрҙө.* Х. Кәрим.

**ЗЕНИ́ТЧИК** *и. кар.* **зенитсы.**

**ЗЕҢ** *окш.* Яңғырап сыҡҡан нәҙек кенә тауышты белдергән һүҙ. *Зең итеп калыу.*

**ЗЕҢЕЛДӘТЕҮ** *к.* Зең-зең иттереү, зең-зең килтереү. *Тәҙрәләрҙе зеңелдәтеп күк күкрәне.*

**ЗЕҢЕЛДӘҮ** *к.* Зең-зең итеү, зең-зең килеү. *Һәйкәл мәңгегә баҫканлыгын белеп, куҙгалманы торган еренән. .. Тик бер вакыт тарта торгас уның китте кулы һынып, зеңелдәп.* Н. Нәжми.

**ЗЕҢЕЛДӘШЕҮ** *к. урт. карт.* **зеңелдәү.**

**ЗЕҢ-ЗЕҢ** *окш.* Ҡабат-кабат зең иткән тауышты белдергән һүҙ. *Зең-зең иттереү. Зең-зең килтереү.* ■ *Биҙрәләргә зең-зең итеп һөт аккан тауышка катын-кыҙҙың: «Малкай! Тик кенә тор,— тигән һүҙҙәре кушыла.* Ф. Әсәнов.

**ЗЕҢК** *окш.* Ҡапыл өҙөлгән яңғырауыҡлы нәҙек тауышты белдергән һүҙ. *Зеңк итеү. Зеңк иттереү.*

**ЗЕҢКЕЛДӘТЕҮ** *к.* Зеңк-зеңк иттереү, зеңк-зеңк килтереү.

**ЗЕҢКЕЛДӘҮ** *к.* Зеңк-зеңк итеү, зеңк-зеңк иткән тауыш сығарыу.

**ЗЕҢКЕТЕҮ** *к.* Әрнетеп, үҙәккә үткәреп һыҙлатыу; сәңгетеү. *Каты һыуык һөйәктәрҙе зеңкетә.*

**ЗЕҢКЕҮ** *к.* Һыҙып-һыҙып һыҙлау; сәңгеү. *Аягым зеңкеп ауырта.*

**ЗЕҢЛӘҮ** *к.* Зең итеү. *Капыл шыгырлап ишек асылды ла кире ябылды. Тәҙрә быялалары зеңләп куйҙы.* Ә. Зәйнуллин.

**ЗЕР** *окш.* Бәләкәй генә нәмә бик тиҙ әйләнгәндә сыҡҡан тауышты белдергән һүҙ. *Зер итеү. Зер килеү. Зер әйләнеү.*

**ЗЕР-ЗЕР** *окш.* Ҡабат-кабат зер итеп әйләнгәндә сыҡҡан тауышты белдергән һүҙ. *Зер-зер итеү. Зер-зер килеү. Зер-зер әйләндереү.*

**ЗЕРЕЛДӘТЕҮ** *к.* Зер-зер иттереү, зер-зер килтереү. *Өйрөлтмәкте зерелдәтеү.*

**ЗЕРЕЛДӘҮ** *к.* Зер-зер итеү, зер-зер килеү. *Өйрөлтмәк елгә зерелдәп әйләнеп тора.*

**ЗЕРЕЛДӘШЕҮ** *к. урт. кар.* **зерелдәү.** *Орсоктар зерелдәшеп әйләнә.*

**ЗЕРКЕН** *с. диал.* Ғауғасыл. *Зеркен кеше.*

**ЗЕРКӘНЛӘТЕҮ** *к. диал.* Елтерәтеү. *Асыуынан үҙен зеркәнләтеп алды.*

**ЗЕРКӘНЛӘҮ** *к. диал.* Үсегеү. *Сак кына ла һүҙ күтәрмәй, зеркәнләп бара.*

**ЗЕРНОПУ́ЛЬТ** [*рус.*] *и.* Игенде һиптереп елгәрә, сортҡа бүлә, тейәй торған машина.

**ЗЕРХӘҮӘТ** *и. диал.* Зырҡыуыт.

**ЗЕРӘ** [*рус.* зря] *р. һөйл.* **1.** Бушҡа, юҡҡа. *Зерә йөрөйһөң. Зерә кыҙаһың.*

**2.** Бик, үтә; шул хәтле. *Зерә нык. Зерә күп. Зерә шәп. Зерә якшы.* ■ *[Айтуган:] Нәбирә апай ни хәлдә йәшәй һуң, әсәй? — Зерә матур йәшәй. Ауылда иң йәш кеше ул бит хәҙер, алтмышын яңы үтте.* Н. Мусин. *Йылы яктарҙан зарыгып, талпынып кайтып килгән һандугастай тоям үҙемде. Ундай сактарҙа йөрәгем зерә лә ашкына.* Д. Бүләков.

**ЗЕРӘГӘ** *р. һөйл.* Бушҡа, юҡҡа. *Зерәгә рәнйетеү.*

**ЗЕФИ́Р** [*рус.* ⟨ *гр.*] *и.* **1.** *шиғр.* Талғын йомшаҡ ел; саба ел. *Зефир еле иҫә-кыуана, кыҙыл әләм уйнай, болгана.* Ә. Ихсан.

**2.** Йоҡа мамыҡ туҡыма. // *Зефир күлдәк.*

**3.** Емеш-еләк һуты менән ҡаймаҡҡа күпертеп бешергән татлы аҙыҡ, пастила төрө.

**ЗИГЗА́Г** [*рус.* ⟨ *фр.*] *и.* Кәкерсәкле һыҙыҡ. *Зигзаг һыҙыу.*

**ЗИЛАЛАЙ(ҒА)** [*гәр.*] *р.* Бер маҡсатһыҙ, эшһеҙ; бушҡа; алағайымға. *Зилалайга сыгып китеү.* ■ *Зилалайга йөрөү ирлек түгел, донъялыкта даның сыкмагас* (Халыҡ йырынан).

**ЗИЛ-ЗИБӘР** *с. кар.* **зир-зәбәр.** *Зил-зибәр килеү. Зил-зибәр килтереү.*

**ЗИЛЗИЛӘ** [*гәр.*] *и.* **1.** Тектоника һәм вулкандарға бәйләнешле барлыҡҡа килгән ер тетрәүе, тирбәлеш. *Бына бер вакыт бик каты зилзилә булып, тауҙар тауҙарҙы косаклаган, ер ярылган.* Ғ. Рафиҡи.

**2.** *күсм.* Төрлө сәбәптән тыуған оло бола, мәхшәр. *Зилзилә кубыу.* ■ *Сәгәттән артык барган зилзилә, ут койоно эсендә яралы егет бер генә тапкыр ыңгырашһасы.* Ш. Янбаев. *Ни-*

*мә булды тип торам, раббым хоҙа, ни тауыш бар, ник иҙәндә зилзилә?* Ш. Бабич.

**ЗИЛЛӘТ** [*ғәр.*] *и. иҫк. кит.* Мәсхәрәле, хурлыҡлы хәл; түбәнлек. *Ғиззәт менән үлеү артығыраҡ зилләт менән ерҙә йәшәүҙән.* Д. Юлтый. *Ғәйшә абыстай .. оло ҡазаға тура килһә лә, көндән-көн үҙен йыуатып .. зилләттәргә төшмәне.* Р. Фәхретдинов.

**ЗИМАГОР** [*рус.* зимогор] *и. тар.* Эш эҙләп ҡышын ситкә киткән ауыл кешеһе. *Зимагор булып йөрөү.* ■ *— Мин йәш сакта зимагор булдым. Ҡыш булһа, Эйек башында Ырымбур байҙарына урман ҡырҡам. Яҙ ҡыуғын ҡыуып Яйыҡҡа тиклем төшәм. Йәй ауылға ҡайтып байға ялсылыҡҡа инәм. Ошолайтып үтте минең ғүмер.* З. Биишева. / *күсм.* Өйһөҙ, ултыраҡһыҙ төрлө ерҙә йөрөгән кеше; берәҙәк. *Күптән бирле мин «ҡыр балаһы», ҡырҙа йөрөгән илһеҙ зимагор.* Т. Йәнәби.

**ЗИМАГОРЛЫҠ** *и.* Зимагор булыу хәле. *Донъяла күпте күргән, оҙаҡ ҡына йылдар зимагорлыҡта йөрөгән Хафиз дин тип, мулла-мунтағай тип бик үк иҫе китә торғандарҙан түгел ине.* В. Исхаҡов.

**ЗИМАК** *и. һөйл. кар.* **зимагор.**

**ЗИМАН** [*ғәр.*]: **зиманын ҡутарыу** пыр туҙҙырыу, кәрәген биреү. *[Гөлзада — Барыйға:] Малды рәтләп ҡарамаһа, мин ул кешеңдең зиманын ҡутарырмын, буш тегеләй.* Ш. Насыров.

**ЗИМЛӘҮ** *к. диал. кар.* **емләү** 3.

**ЗИММӘ** [*ғәр.*] *и. иҫк. кит.* Өҫкә алынған яуаплылыҡ; кемдеңдер бурысы, ҡарамағы. *[Мулла:] Ҡыҙҙың кисвә вә нәфәҡаһы зиммәгеҙҙә булып, ҡаланың дәруазәһенән сыҡмаһын.* Ғ. Рафиҡи. *Ҡарт менән әбей эшлектән сығып ҡартайыу сәбәпле, былар [ике егет] зиммәһенә ҡала* (Әкиәттән).

**ЗИНА** [*ғәр.*] *и.* **1.** Ир менән ҡатын-ҡыҙҙың никаһһыҙ енси бәйләнеше; уйнаш. *Зинанан тыйыу.* ■ *Кемдер: «Сәмиға ҡарсыҡтың ҡыҙы зина ҡылып бала тапҡан», тип өҫтәп ҡуйҙы.* Ғ. Хәйри. *Ишеттеңме, ниҙәр булған? Ғариф ҡыҙы зина ҡылған? Ҡапҡа юҡҡа буялмай ул! Битһеҙ! Нисек оялмай ул.* М. Кәримов.

**2.** Ҡатын-ҡыҙҙың тән һатыу шөғөлө; фәхишәлек. *Зина йорто. Зина менән көн күреү.*

**ЗИНАР** [*ғәр.*] *и. иҫк. кит.* Биллек, билбау. *Ишектән [билен] ебәк зинар менән быуған .. Хөсәйенов килеп сыҡты.* С. Агиш.

**ЗИНАСЫ** *и.* **1.** Никаһһыҙ енси бәйләнешкә ингән кеше; уйнашсы. *[Сатан:] Зинасыларҙы — Әлтәф ҡарт ҡыҙы Сәхибә менән Мәхмүтте тоттоҡ.* Ғ. Хәйри.

**2.** Тән һатыу менән шөғөлләнгән ҡатын-ҡыҙ; фәхишә. *Зинасы ҡатын.*

**ЗИНАХУР** *и. иҫк. кар.* **зинасы.**

**ЗИНДАН** [*фарс.*] *и. кит.* **1.** Тотҡондо бикләү өсөн ергә тәрән, тар итеп ҡаҙып эшләнгән соҡор. *Алпамышаны .. ер аҫтына, зинданға бикләп ҡуйҙылар, ти.* «Алпамыша».

**2.** Иркенән мәхрүм ителгәндәрҙе ултыртып ҡуя торған урын; төрмә. *Мин — тотҡон Батырша, башҡорттоң батыры, ултырам зинданда башымды ҡатырып.* Р. Ғарипов. *Түҙемголдоң ҡушыуы буйынса, иптәштәре зиндандағы тотҡондарҙы ирекҡә сығарғандар* (Әкиәттән).

**ЗИНДИҠ** [*ғәр.*] *с. иҫк.* Алланы танымаған; динһеҙ. *Әһле зиндиҡ шаҡ ҡатып торһон, боҙолһон интизам.* Ш. Бабич. / *күсм.* Оятын юйған, намыҫһыҙ. *[Мәзин:] Аҡса һиңә тағы ла! Зиндиҡ бит. Үҙеңдән тейә һинең!* С. Агиш.

**ЗИННӘТ** [*ғәр.*] *и.* **1.** Ҡиммәтле аҫыл нәмә. *[Ирәндек] үҙенең ҡуйынындағы бөтмәҫ-төкәнмәҫ зиннәттәре менән генә түгел, бөтә булмышы, тышҡы йәннәте менән дә күңел-ҡараштарҙы үҙенә тарта.* «Совет Башҡортостаны», 1970, 8 ғинуар.

2. Матурлыҡ, йәм, күрк. *Ҡар бөткән урындарға зиннәт бирер вак-вак ҡына төрлө-төрлө үлән үҫеп.* М. Ғафури. *Әллә килеп инде микән күк йөҙөнән күк зиннәте — Зөһрә йондоҙо.* Д. Юлтый. / *күсм.* Кемдер, нимәлер биргән йәм, күрк; күркәмлек. *Бар ине хандың тоғро бер вәзире, аҡылынан маҡтана ине Ҡытай иле. Уның менән артты илдең зиннәте. Илдә сикһеҙ мул ҡараның шөһрәте.* М. Харис.

**3.** (*баш хәреф менән*) Ир-ат исеме.

**ЗИННӘТЛЕ** *с.* **1.** Ҡиммәтле, аҫыл. *Зиннәтле таш.* ■ *Рамазан өлкәндәр менән бергә ер аҫтынан алтын эҙләгән. Ил өсөн кәрәк булған ана шул зиннәтле металды тапҡан ул.* М. Хәйҙәров.

**2.** Танылған, яҡшы. *Бай ана шул нәҫеле зиннәтле булған өсөн дә күп аҡсалар биреп һатып алған да инде Алмасыбарҙы.* Й. Мостафин.

**3.** Матур итеп биҙәлгән, йәмле. *Һәр кем зиннәтле ҙур йортҡа инеүҙе көтә ине.* С. Агиш. / *күсм.* Тәрән мәғәнәле, оҫта ҡулланылған (һүҙгә ҡарата). *Һүҙ зиннәтле булһа, шиғри туҡыма ла затлы була.* Ғ. Хөсәйенов.

**ЗИННӘТЛӘНЕҮ** *к. төш. кар.* **зиннәтләү.** *Ҡарамырҙаның өйө, стена иҙәндәре келәмдәр менән зиннәтләнгән.* Х. Ғәбитов. *Йортто тыштан төрлө флагтар һәм гәйре әсбаптар менән зиннәтләнеләр.* М. Өмөтбаев.

**ЗИННӘТЛӘТЕҮ** *к. йөкм. кар.* **зиннәтләү.**

**ЗИННӘТЛӘҮ** *к.* Матур итеп биҙәкләү; биҙәү. *Ҡунаҡ килгән саҡта кеше, барлы-юҡлы ғына өйөн дә йыйыштырып, үҙенсә зиннәтләп [ҡуйырға] тырыша.* Б. Бикбай.

**ЗИНҺАР** [*фарс.*] *к.* Үтенеп ниҙер һорағанда әйтелә; берүк. *[Гөлкәй — старшинаға:] Зинһар ике балам, кәйнәм хаҡы өсөн ҡотҡарығыҙ иремде.* Т. Хәйбуллин. *[Мәскәй — Тамыр батырға:] Туғаның хәҙер алдында булыр. Зинһар, ҡамсынды ташлай күр* (Әкиәттән).

**ЗИҢКЕҮ** *к. диал.* Зыңҡыу. *Башым зиңкеп ауырта.*

**ЗИР** *и. диал. кар.* **зәр** [1].

**ЗИРАҒ** [*ғәр.*] *и. иҫк. кит.* Бер терһәк оҙонлоғондағы үлсәү берәмеге (58 см). *Болғар ерендә мин бер ҙур кеше күрҙем. Уның буйы ете зираг кәҙәре ине* (Хикәйәттән).

**ЗИРАӘТ** [*ғәр.*] *и. иҫк. кит.* **1.** Игенселек.

**2.** Ауыл хужалығы.

**ЗИРГӘК** *с. кар.* **зирәк.**

**ЗИР-ЗӘБӘР** *с.* **1.** Аҫты-өҫкә әйләнгән; пыран-заран. *Зир-зәбәр булыу.* ■ *Зир-зәбәр килһен бөтә ғүмерем, икмәгеңде башка ашаһам.* М. Хәй.

*Зир-зәбәр килгәс тә ер, күк, булды донъя тағы ла тын.* М. Ғафури.

**2.** *күсм.* Тәртипһеҙ, бола. *Зир-зәбәр уйҙар, ғазаптар менән тик һыҙлай был баш.* Ш. Бабич.

**ЗИРЛӘҮ** *к. диал.* Зәрләү.

**ЗИРӘ** [*фарс.*] *терк. иҫк. кит.* Сөнки, ни өсөн тигәндә. *Зирә ул башкалар кеүек Ғәли байҙы ололамаҫ инә.* Аҡмулла.

**ЗИРӘК** [*фарс.*] *с.* **1.** Тиҙ генә аңлап, отоп барыусан; сос, аҡыллы, башлы. *Улар [Хаммат менән Закир] үтә зирәк булды: әллә ни арала һәйбәт итеп уҡырға-яҙырға өйрәнеп алдылар.* З. Биишева.

**2.** Алдан күреп, дөрөҫ аңлап, аҡыл менән эш итеүсән; һиҙгер аҡыллы. *Зирәк аҡыл.* ■ *Иң уҫал, тупаҫ уҡытыусылар ҙа бөгөн йомшағыраҡ ине — һәр хәлдә зирәк шәкерттәр ҙур үҙгәреш булғанын, йә булырға тейешлеген һиҙендә.* С. Агиш. *Салауат та тигән ай аҫыл ир — зирәк иркәйҙәрҙең зирәге* (Халыҡ йырынан). / Эшкә уңған, булдыҡлы. *Егет куллы ирҙәр — зирәктер, төндә көн иткәндәр — һирәктер.* М. Басыров.

● *Ауға барһаң, зирәк бул, юлдашыңа терәк бул.* Әйтем.

**ЗИРӘКЛЕК** *и.* **1.** Тиҙ генә аңлап, отоп барыу һәләте; отҡорлоҡ, сослоҡ. *«Ғәлиә» ләге ауылдаштарым бөтәһе лә тиерлек Бабичты маҡтанылар, уның тапҡырлығына, зирәклегенә һәм ирмәклегенә һоҡландылар.* С. Ҡудаш. *Дәресте күп ҡалдырһа ла кластан класҡа күсеп бара, шул зирәклеге, отҡорлоғо менән алдыра инде ул [Рахмай].* К. Кинйәбулатова.

**2.** Аҡыл менән эш итеү һәләте; һиҙгер аҡыл. *Муса Йәлил бала сағында уҡ үҙенең зирәклеге, аҡыллылығы менән тиҫтерҙәрен генә түгел, шаҡтай өлкән йәштәге егеттәрҙе лә таңға ҡалдыра торғайны.* С. Агиш. *[Әлхәмов:] Управдом эше, кәҙерен белһәң, хикмәтле ул. Политиканы белергә кәрәк, бисәкәй. [Фәжига:] Зирәклекте хоҙай йәлләмәгән инде үҙеңдән.* С. Кулибай. / Эшкә уңғанлыҡ, булдыҡлылыҡ. *Шул көндән алып Әбйәлилдә яҡшы аттар үрсетәләр икән. Ә егеттәренең зирәклеге һәм ҡыйыулыҡ менән тирә-яҡта дандары таралған, ти* (Әкиәттән).

**ЗИТ: зитка тейеү** асыуҙы килтереү; йәнде көйҙөрөү. *«Бында эш ҡалдырып, эт һуғарып йөрөүселәр бөтмәҫ, ултыр тракторыңа, әйҙә киттек!» — тип Ҡаһымбай Буранбайға екерҙе. Уның был һүҙҙәре Батырҙың зитына тейҙе.* И. Ғиззәтуллин. *Байҙың тоҡом үгеҙен тотоп алып, мөгөҙөнә мөйәт, алам-һалам септә элеп, ҡойроғонан тартып үсекләй, зитына тейә башланы.* С. Кулибай.

**ЗИТҺЫҘ** *с.* Йәне көйә белмәгән, моңһоҙ. *[Гөлъямал:] Ә Нәфисәһе бигерәк бешмәгән, боламыҡ. Үҙ күләгәһенән [үҙе] ҡурҡа. Шул тиклем дә зитһыҙ кеше булыр икән!* Я. Хамматов.

**ЗИФА** [*фарс.*] *с.* **1.** Һылыу, ҡупшы, һомғол. *Зифа буйлы ҡыҙ. Зифа тал.* ■ *Елбәҙәкләп теккән зәңгәр бәрхәт зифа буйға бигерәк килешкән.* Ш. Бабич. *[Башҡортостан йылғаларында] буйҙары зифа ҡамыштар шым ғына йырлап тора.* Р. Ниғмәти. *Һинең генә кеүек зифа йәрҙәр нисек тыуып, нисек үҫә икән* (Халыҡ йырынан). / Бик матур, нәфис. *Һөнәрсенең бөтә өйө тулып, йондоҙ кеүек йымылдашып ултырған гәжәп зифа, ысын яһау көршәктәрҙең әле береһен, әле икенсеһен алып, баш сайҡап, тел сатылдатып торған.* З. Биишева.

**2.** (*баш хәреф менән*) Ҡатын-ҡыҙ исеме.

**ЗИФАЛАНЫУ** *к.* Зифаға әйләнеү, күркәмләнеү. *[Ғәни:] Бала сағында ҡып-ҡыҙыл, сырайһыҙ ғына булмаҡсы ине, ниндәй зифаланып, матурланып киткән.* Х. Ибраһимов.

**ЗИФАЛЫҠ** *и.* Тән төҙөлөшөнөң, һындың матурлығы; һомғоллоҡ.

**ЗИФАФ** [*ғәр.*] *и.* Егет менән ҡыҙҙың ҡауышыуы; никах. *Зифаф төнө.* ■ *Фәхрелбанаттың ун биш йәшендә зифафы булып, Хәсән мулланың ғүмерлек рафиҡаһы булды.* З. Һаҙи.

**ЗИҺЕН** [*ғәр.*] *и.* **1.** Кешенең аң, аҡыл һәләте. *Зиһен артыу. Зиһен асылыу. Зиһен томаланыу.* ■ *[Сәхипъямал:] Ат түҙмәгәнде, беҙ аслы-туҡлы бисә-сәсә, нисек түҙҙек икән? Шуға әле зиһенем етмәй.* Х. Ғиләжев. *Халыҡ ғорур, ҡылды меңгә ярыр уның зиһене, уның ҡулдары.* Р. Бикбаев.

**2.** Хәтер, иҫ; уйлау һәләте. *Зиһенем юҡ. Зиһене яҡшы.* ■ *Бөгөнгө осрашыуҙар, көндөҙгө һөйләшеүҙәр һаман да күҙ алдынан китмәй, тәьҫораттары зиһененән сығып бөтмәй.* Ғ. Вәлиев. **Зиһенде йыйыу** (*йәки* **туплау**) ҡыйын хәлдән сығып, иҫкә килеү; яйлап хәтергә төшөрөү. *Тәкмәс атып барып төшкән Мөхәрләм зиһенен йыйып улай-былай иткәнсе һуң ине инде: машина тау аҫтына тәгәрәп китте лә барҙы.* А. Ғирфанов. *Дәреслектә яҙылған һәр һөйләмдең мәғәнәһенә ныҡлап төшөнөргә тырышып, Кәрим бөтә зиһенен тупланы.* Я. Хамматов. **Зиһен таралыу** 1) нимәлер хәтерҙән, иҫтән сығыу, онотоу. *Зиһенем таралып китте бит әле. Кешенең йөҙөнә ҡарап һөйләшмәһәм, бөтә донъямды онотам да ҡуям.* К. Мәргән; 2) юғалып ҡалыу, аңҡы-тиңке булыу. *Конверт эсенән алған суд ҡарарын .. ҡат-ҡат уҡып сыҡҡас, Сәрби шаҡ ҡатып, зиһене таралып, бүлмә уртаһында оҙаҡ баҫып торҙо.* Х. Зарипов. **Зиһен юйылыу** *ҡар.* **зиһен таралыу** 2. *Көтөлмәгән хәлгә шаҡ ҡатҡан малайҙар, зиһендәре юйылып, ауыҙ асып ҡалды.* Ф. Иҫәнғолов.

**ЗИҺЕНЛЕ** *с.* **1.** Аң, аҡыл һәләте юғары. *Зиһенле булыу.* ■ *Бөтәһенән матур, зиһенлерәк, уңғаныраҡ минең әсәйем.* Р. Ғарипов. *Түңәрәк күл буйында тирмәләр ҡороп, салт аҡыллы, гәжәп зиһенле Салауат батыр үҙенең ҡатыны, бер улы, бер ҡыҙы менән ғүмер иткән* (Хикәйәттән).

**2.** Хәтере, иҫе камил. *Зиһенле кеше.* ■ *Муса .. үҙе зирәк, зиһенле малай. Ишеткән-күргәнен иҫенән сығармай.* З. Ураҡсин. *Бер тапҡыр үткән юл, .. кешенең дә, аттың да зиһенендә ҡала, эт тә, хатта ҡоштар ҙа шулай зиһенле була.* С. Кулибай.

**ЗИҺНИ** [*ғәр.*] *с.* Аҡылға, зиһенгә мөнәсәбәтле. *Зиһни кимәл.*

**ЗМЕЙКА** [*рус.*] *и. а. х.* Игенде сорттарға айыра торған ҡорамал.

**ЗНАК** [*рус.*] *и.* **1.** *ҡар.* **тамға** 4.

**2.** *ҡар.* **билдә** 1, 2.

**ЗНАКУМ** [*рус.* знакомый] *и. һөйл. кар.* **белеш.** *[Тэнзилэ:] Питрэ знакум, был мин.. Карамалинский Тэнзилэ.* М. Тажи.

**ЗНАМЕНА́ТЕЛЬ** *и.* Кәсерҙә һыҙыҡ аҫтында тороп, бөрәмектең нисә тигеҙ өлөшкә бүленгәнлеген күрһәткән һан. *Сагыштырма знаменатель.*

♦ **Уртаҡ знаменателгә килтереү** *кит.* бер нисә нәмәне йәки күренеште бер-береһенә оҡшатып, тап килтереп тигеҙләп булеү.

**ЗНАЧО́К** [*рус.*] *и.* Кешенең эшен баһалау йәки ниндәйҙер ваҡиғаны билдәләү өсөн сығарылып, түшкә тағып йөрөй торған тамға. *Комсомол значогы. Пионер значогы. Ударник значогы. Университет значогы. Халыҡ мәғарифы отличнигы значогы. Өфөнөң 400 йыллығына сығарылған значок.* ■ *«Ворошиловса атыусы», ГТО, ГСО значоктарына нормалар тапшырыу беҙҙең быуынды физик яҡтан сыныҡтырҙы.* И. Ғиззәтуллин.

**ЗНАЧОКЛЫ** *с.* Значок менән бүләкләнгән; значок йөрөткән. *Значоклы спортсмен. Значоклы уҡыусы.*

**ЗОБ** [*рус.*] *и. кар.* **ҡуштамаҡ.**

**ЗОБАНЫЙ** [*гәр.*] *и. иҫк. кит.* **1.** Ислам диненсә, тамуҡ эргәһендәге һаҡсы. *Зобаный суҡмары.* ■ *Зобанийҙар һелтәп гөрҙөй суҡмар, болоттарҙы бутай, ҡуйырта. Ут эсенән сүпләп вәхши ҡоштар, беҙҙең өҫкә үлем ырғыта.* Ш. Бабич.

**2.** *кусм.* Яуыз, уҫал кеше. *Шатланмаһын, тинем, зобанийҙар күҙ йәштәрен күреп батырҙың.* Ғ. Әмири.

**ЗОДИА́К** [*рус.* ⟨ *гр.*] *и. астр.* Ҡояштың йыллыҡ хәрәкәт юлы буйлап урынлашҡан ун ике йондоҙлоҡ (**Һыуҡояр, Балыҡ, Ҡуҙы, Буға, Игеҙәктәр, Ҡыҫала, Арыҫлан, Ҡыҙ, Үлсәү, Саян, Уҡсы, Ылаҡ**).

**ЗОЛАМӘТ** [*гәр.*] *и. иҫк. кит. кар.* **золмәт** [2].

**ЗОЛМӘТ** [1] [*гәр.*] *и. иҫк. кит.* **1.** Төн ҡараңғылығы. *Ярым төн золмәттә күҙ нурым айҙай тотолдо.* Б. Мирзанов. *Нур илә золмәт вә төн, көндөҙ барыберҙер һиңә.* Я. Юмаев.

**2.** Наҙанлыҡ, ҡараңғылыҡ. *Золмәт дәүере. Йәһәләт золмәте.* ■ *Золмәт маяҡтары — манаралар, яңғыратмағыҙ аҙан өндәрен.* Д. Юлтый.

**ЗОЛМӘТ** [2] *и. иҫк. кит.* **1.** *кар.* **золмәт** [1] 1.

**2.** *кусм.* Иҙгенлек, ҡоллоҡ. *Золмәт күреү.* ■ *Золмәт, вәхшәт нигеҙенә ҡоролған царизмдың иң ҙур арка таяныстарының береһе жандармерия булһа, икенсеһе дин ине.* И. Насыри. *Унда вәхшәт, унда золмәт, ут, йәһәннәм, эҫе нар. Ҡайҙа баҡма гәм дә хәсрәт, моңһоу донъя, ҡайғы-зар.* Б. Мирзанов.

**ЗОЛОМ** [*гәр.*] *и. иҫк. кит.* Иҙгенлек, ҡоллоҡ, ғәҙелһеҙлек. *Золом ҡылыу.* ■ *Батша хөкүмәтенең золомон бынан ары күтәрергә хәл ҡалманы.* Һ. Дәүләтшина.

**ЗОЛОМ-ЙӘБЕР** *и. йыйн.* Золом һәм йәбер. *Золом-йәбер аҫтында йәшәү.*

**ЗОЛОТНИ́К** [*рус.*] *и.* Пар машинаһының цилиндрына парҙы тейешенсә йүнәлтә торған ҡорамал.

**ЗО́НА** [*рус.* ⟨ *гр.*] *и.* Ниндәйҙер дөйөм билдәһе, тәбиғи шарттары һ. б. менән билдәләнгән урын; төбәк, район, бүлкәт. *Урманлы тау зонаһы. Урманлы дала зонаһы. Сүллек зонаһы. Урал арты зонаһы. Урал алды зонаһы.* ■ *Стенала һәр МТС зонаһы үҙенә бер төрлө буяу менән эшләнгән район картаһы эленеп тора.* Ә. Вәли.

♦ **Зона тарифы** теге йәки был зона өсөн билдәләнгән хаҡ.

**ЗОНАЛЬ** [*рус.* зональный] *с.* Билдәле зонаға мөнәсәбәтле, билдәле зонаға хас. *Зональ үҙенсәлектәр.* / Берәй зонала булған йәки бер нисә зонаны биләгән. *Зональ күргәҙмә. Зональ кәңәшмә. Зональ ярыш.*

**ЗОНД** [*рус.* ⟨ *фр.*] *и.* **1.** Ниҙеңдер эсенә индереп ҡарай, тикшерә, өлгө ала торған көпшә рәүешендәге ҡорамал. *Медицина зонды. Тупраҡ зонды.*

**2.** Һауаның юғарғы ҡатламдарын тикшерә торған һауа шары. *Һауа зонды.*

**ЗОНДЛАУ** *к.* Зонд менән тикшереү. *Тупраҡты зондлау.*

**ЗО́НТИК** [*рус.* ⟨ *гол.*] *и.* Ямғырҙан йәки ҡояштан ышыҡланыу өсөн, таяҡҡа беркетелгән каркасҡа кереп эшләнгән йыйылмалы ҡулайлама. *Зонтикты асыу.* ■ *Әле бына уҙған аҙнала ғына [Колмырҙа старшина] ҡара тройкаһына ултырып, .. эҫелеккә сыҙамай зонтигы һалҡынына ышыҡланып .. старателдәр янына уҙып киткәйне.* Т. Хәйбуллин. *Ағайым зонтик бүләк итте зәңгәр һауа түңөндә. Инде хәҙер мин йөрөйөм ямғырҙы теләп көн дә.* С. Муллабаев.

**ЗООВЕТЕРИНАРИ́Я** [*рус.*] *и.* Малдарҙы тәрбиәләү, үрсетеү, дауалау һәм ауыл хужалығында дөрөҫ файҙаланыу юлдарын өйрәнә торған фән. *Зооветеринария белгесе. Зооветеринария институты. Зооветеринария пункты. Зооветеринария уҡыуҙары.*

**ЗООГЕО́ГРАФ** [*рус.*] *и.* Зоогеография буйынса белгес.

**ЗООГЕОГРАФИК** *с.* Зоогеографияға мөнәсәбәтле.

**ЗООГЕОГРА́ФИЯ** [*рус.*] *и.* Ер йөҙөндә хайуандарҙың таралышын өйрәнә торған фән.

**ЗОО́ЛОГ** [*рус.*] *и.* Зоология менән шөғөлләнгән белгес.

**ЗООЛОГИК** *с.* Зоологияға мөнәсәбәтле. *Зоологик атлас.*

**ЗООЛО́ГИЯ** [*рус.* ⟨ *гр.*] *и.* Хайуандар донъяһын өйрәнә торған фән. *Зоология кафедраһы.* ■ *[Ғүмәр:] Әсәй, зверинецка барырға аҡса бир әле. Беҙ бит зоология үтәбеҙ. Беҙгә уны уҡыусы ла ҡарарға ҡушты.* С. Агиш.

**ЗООПА́РК** [*рус.*] *и.* Күргәҙмә өсөн йәнлектәрҙе яһалма шарттарҙа аҫрай торған урын. *Кусмә зоопарк.*

**ЗООТЕ́ХНИК** [*рус.*] *и.* Зоотехника буйынса белгес. *Баш зоотехник. Колхоз зоотехнигы.* ■ *Колхоздарға заманында йә осраҡлы рәүештә, йә еңел кәсеп эҙләп калаларҙа оя яһаған агрономдар, зоотехниктар ҡайта башланы.* И. Абдуллин.

**ЗООТЕХНИ́К** *с.* Зоотехникаға ҡараған, зоотехникаға бәйле. *Зоотехник кағиҙә. Зоотехник түңәрәк.* ■ *Зоотехник иҫәп — малдарҙың тоҡомон яҡшыртыуға иң мөһим сара.* «Совет Башҡортостаны», 1971, 29 ғинуар.

**ЗООТЕ́ХНИКА** [*рус.*] *и.* Малды үрсетеү, ҡарау һәм дөрөҫ файҙаланыу тураһындағы фән. *Зоотехника курстары. Зоотехника факультеты.*

**ЗОФРИЯТ** [*фарс.*] *и. иҫк. кит.* Еңеүсе. *Әл-Хәнәфи әй Мозаффар, зофрият бул, нык тырыш. Борсагың һип, муллаларҙы аҫҡа ташлап, өҫкә ос.* Ш. Бабич.

**ЗОҺУР** [*ғәр.*] *и. иҫк. кит.* Сығыш; билдәле булған ваҡыт. *Башкорт исеменең зоһуры Бағдад хәлифәһе Моктадир тарафынан Болгар дәүләтенә күндерелмеш булған илсе һәйәтенең былар араһынан күсеп киткәндән һуң булмыштыр.* Р. Фәхретдинов.

**ЗӨБӘЛӘ** *и. диал.* Сыңғарсай бармаҡ (*кар.* **бармаҡ**).

**ЗӨБӘРЖӘТ** [*ғәр.*] *и.* **1.** Үтә күренеп торған асыҡ йәшел төҫтәге аҫыл таш. *Зөбәржәт кашлы йөҙөк.*

**2.** *күсм.* Асыҡ йәшел төҫ. // *Диңгеҙ зөбәржәт нур бөркөп, күҙҙең ауын алып йымылдап ятҡан.* З. Биишева. **Зөбәржәт йәшел** асыҡ йәшел.

**ЗӨЛЙӘЛӘЛ** [*ғәр.*] *и. иҫк. кит.* **1.** Бөйөклөк.

**2.** Аллаһы бөйөкләп әйтелгән һүҙ. *Гөльямал төнөн .. һин булма аңкау, бул уяу, зөлйәләлеңдән һора, төндә тороп тәкүә кейәү.* Ш. Бабич.

**ЗӨЛҠАҒИҘӘ** [*ғәр.*] *и.* Ай календарының ун беренсе айы (*кар.* **календарь**). *Һугышка барып индек зөлкагиҙә айында* (Бәйеттән).

**ЗӨЛМӘТ** *и. кар.* **золмәт** [1]. *Зөлмәттән әбелхәйәт табырга сыктык.* Ғ. Ибраһимов.

**ЗӨЛФ** [*фарс.*] *и. иҫк. кит.* **1.** Һөйгән ҡыҙҙың сәс толомо. *Кульяҙма поэзияла .. исеме билдәһеҙ шагир каш, күҙ, ауыҙ [агыҙ] тип яҙып килә лә иренгә килеп еткәс, уны ләб тип ала, ә сәс толомо зөлф булып китә.* Ә. Харисов.

**2.** (*баш хәреф менән*) Ҡатын-ҡыҙ исеме.

**ЗӨЛФӘҠӘР** [*ғәр.*] *и. иҫк.* Ғәли хәлифәнең, йәнәһе, бер сапҡанда умыртҡа һөйәген өҙә саба торған ҡылысы. *Утлы пар кеүек һулыш теләйем, зөлфәкәр кеүек кылыс теләйем.* Ш. Бабич.

**ЗӨЛФӘРӘКӘН** *р. диал.* Селпәрәмә.

**ЗӨЛФӘРӘМӘ** *р. диал. кар.* **селпәрәмә.**

**ЗӨЛХИЗӘ** [*ғәр.*] *и.* **1.** Ай календарының ун икенсе айы (*кар.* **календарь**). *Зөлхизә айында тыуган.*

**2.** (*баш хәреф менән*) Ҡатын-ҡыҙ исеме.

**ЗӨМБӨР** *окш. һөйл.* Тәрән һыуға ауыр нәмә төшкәндә сыҡҡан тауышты белдергән һүҙ. *Зөмбөр итеү. Зөмбөр итеп калыу.*

**ЗӨМРӘ** [*ғәр.*] *и. иҫк. кит.* Уртаҡ, дөйөм сифатҡа эйә булған төркөм. *1917 йыл революция башланыу менән Россиялагы иҙелгән вак милләттәр зөмрәһенән булган башкорт халкы .. үҙ хокугын даулап революция майҙанына сыкты.* Ш. Хоҙайбирҙин.

**ЗӨМРӘТ** *и. кар.* **зөбәржәт** 1. *Зөмрәт кашлы йөҙөк.*

**ЗӨРРИӘ** *и. кар.* **зәррә** 1. *Зөрриәләй якты юк.*

**ЗӨХӘЛ** [*ғәр.*] (*баш хәреф менән*) *и. иҫк. кит.* Сатурн.

**ЗӨҺРӘ** [*ғәр.*] (*баш хәреф менән*) *и.* **1.** (*йәки* **Зөһрә йондоҙо**) Ҡояштан икенсе торған планета исеме; Сулпан, Венера.

**2.** Ҡатын-ҡыҙ исеме.

♦ **Зөһрә аусыһы** бөжәк ашай торған бәләкәй генә һаҙ үләне. **Зөһрә сәсе** һеркәләнеү юлы менән үрсей торған бәләкәй матур үлән.

**ЗУБР** [*рус.*] *и. кар.* **думбай** [2].

**ЗУР** [*фарс.*] *с. иҫк.* Көслө, ғәйрәтле.

**ЗУРЛАУ** *к. иҫк.* Ирекһеҙләү, көсләү. *[Айһылыу:] Мин бер сакта кыҙ инем, иркә үҫкән буҙ инем, дейеү мине урланы, кейәүгә биреп зурланы.* «Урал батыр».

**ЗУРЛЫҠ** *и. иҫк. кит.* Ҡөслөк. *Береһе малын береһе алган зурлык менән* (Ҡобайырҙан).

**ЗЫБЫН** *и. диал.* Көбөсәк.

**ЗЫЙ** *окш.* Шәп осоп, елеп үткән нәмәнең ҡыҫҡа, өҙөк тауышын белдергән һүҙ. *Зый итеү.*

**ЗЫЙ-ЗЫЙ** *окш.* Ҡабат-ҡабат зый иткән тауышты белдергән һүҙ. *Зый-зый итеү. Зый-зый килеү. Зый-зый осоу.*

**ЗЫЙК** *окш.* Яңғырап ҡапыл туҡтаған өҙөк тауышты белдергән һүҙ. *Зыйк итеү.*

**ЗЫЙК-ЗЫЙК** *окш.* Ҡабат-ҡабат зыйҡ иткән тауышты белдергән һүҙ. *Зыйк-зыйк итеү. Зыйк-зыйк килеү.*

**ЗЫЙҠЫЛДАТЫУ** *к.* Зыйҡ-зыйҡ иттереү, зыйҡ-зыйҡ килтереү. *Зыйкылдата баҫыу.*

**ЗЫЙҠЫЛДАУ** *к.* Зыйҡ-зыйҡ итеү, зыйҡ-зыйҡ килеү. *Ат тояктарының зыйкылдауы .. тын яткан кар далаһының тыныслыгын боҙа ине.* Һ. Дәүләтшина.

**ЗЫЙҠЫЛДАШЫУ** *к. урт. кар.* **зыйҡылдау.**

**ЗЫЙЛАТЫУ** *к.* **1.** Зый иттереү, зый килтереү. *Зыйлатып снаряд яуҙыра.*

**2.** *күсм.* Нимәнелер бик тиҙ эшләү, башҡарыу; елдереү. *Зыйлатып барып етеү.* ■ *[Ат менән йөрөгән катын-кыҙ] ырҙында алтышар ботло токтарҙы эһ тә итмәй ыргыталар ҙа зыйлатып сыгып та китәләр.* Р. Солтангәрәев.

**ЗЫЙЛАУ** *к.* **1.** Зый итеү, зый иткән тауыш сығарыу. *Зыйлап осоу. Баш осонан пуля зыйлап тора.*

**2.** Хәл ҡылымдың *-п* формаһында килеп, хәрәкәттең бик етеҙ, шәп булғанын белдерә. *Зыйлап үтеп китеү.* ■ *Нина мәктәп кыҙҙары кеүек баҫкыстан зыйлап төшөп китте.* Һ. Дәүләтшина.

**ЗЫЙЛАШЫУ** *к. урт. кар.* **зыйлау.** *Пулялар зыйлашып оса.*

**ЗЫЙТ** *окш.* **1.** Бик шәп осоп, елеп үткән нәмәнең киҫкен хәрәкәтен белдергән һүҙ. *Зыйт итеү. Зыйт иттереү. Зыйт итеп калды.*

**2.** *ымл. мәг. һөйл.* Кешене тиҙ китергә ҡушып, ҡыуғанда әйтелә. *Зыйт бынан, күҙемә күренмә!*

**ЗЫЙТ-ЗЫЙТ** *окш.* Ҡабат-ҡабат зыйт иткәндә белдергән һүҙ. *Зыйт-зыйт итеү. Зыйт-зыйт осоу. Пулялар зыйт-зыйт килә.*

**ЗЫЙТЛАТЫУ** *к. һөйл.* Ғәҙәттә хәл ҡылымдың *-п* формаһында килеп, «бик тиҙ, ҡапыл» төшөнсәһен бирә. *Зыйтлатып үтеп китте.*

**ЗЫЙТЛАУ** *к. һөйл.* Ғәҙәттә хәл ҡылымдың *-п* формаһында килеп, хәрәкәттең бик тиҙ һәм ҡабатлаулы булғанын белдерә. *Пулялар зыйтлап тора.* ■ *Күҙ алдынан хәтфә яландар, бөҙрә әрәмәлектәр зыйтлап үтә.* «Совет Башҡортостаны», 1967, 9 июнь.

**ЗЫЙТЫЛДАТЫУ** *к.* Ҡабат-ҡабат зыйт иттереү.

**ЗЫЙТЫЛДАУ** *к.* Ҡабат-ҡабат зыйт итеү. *Тирә-яҡта пулялар зыйтылдап оса.*

**ЗЫЙТЫМ** *и. диал.* **1.** Ваҡ сурағай.

**2.** *күсм.* Киҫкен, йылғыр хәрәкәтле кеше.

**ЗЫЙЫЛДАТЫУ** *к.* Ҡабат-ҡабат зый иттереү. *Зыйылдатып таш бәреү.*

**ЗЫЙЫЛДАУ** *к.* Ҡабат-ҡабат зый итеү. *Бөгөн пуля зыйылдамай, үлем тормай һағалап.* Х. Кәрим.

**ЗЫЙЫЛДАШЫУ** *к. урт. кар.* **зыйылдау.** *Баш осонан зыйылдашып пулялар оса.*

**ЗЫҠ: зыҡ ҡубыу** 1) шау-шыу, ығы-зығы килеү; сырсыулашыу. *Ишек ябылғас та, балалар кәзәне йәлләп, зыҡ ҡубып иларға тотондо. Аҡтыҡ малдан яҙыуы бигерәк ҡыйын ине.* Я. Хамматов; 2) ныҡ асыуланып әрләү; пур туҙыу. *Баланы ҡарамағандар тип, әсәйем зыҡ ҡуба.* **Зыҡ ҡуптарыу** 1) шау-шыу күтәреү, ығы-зығы тыуҙырыу. *Теге эттең зыҡ ҡуптарып абалап өргәнен ишеткәс, унан да, бынан да өрөп сыҡҡан эттәр, бер-ике минут эсендә Насирҙарҙың арбаһын һырып алды.* М. Ғафури; 2) ныҡ итеп әрләү; пыр туҙҙырыу. *Бригадир Әхмәтҡол бөгөн бөтәһен зыҡ ҡуптарҙы.* С. Агиш.

**ЗЫҠЫ** *и. диал.* Һыҡы. *Юлдың бөгөн зыҡыһы йомшарған. Сана табандары сыжламай.* С. Ҡудаш.

**ЗЫМБЫР** *окш. кар.* **земб**ер.

**ЗЫМЗЫЯ** [*гәр.*] *р.* Бер эҙһеҙ, хәбәрһеҙ. *Зымзыя бөтөрөү.* ■ *[Илгужа:] Таң янына бармай булмаҫ инде ул. Зымзыя юғалма тигәйне.* Ғ. Ибраһимов. *Ҡуҙыйкүрпәс шул китеүенән зымзыя юк булды.* «Ҡуҙыйкүрпәс менән Маянһылыу».

□ **Зымзыя булыу** юғалыу, юҡ булыу. **Зымзыя итеү** юҡ итеү.

**ЗЫМЫРЛАУ** *к. кар.* **земберләү.**

**ЗЫҢ** *окш.* **1.** Тимергә тимер йәки башҡа нәмә бәрелгәндә, йоҡа ҡаты нәмә шундай уҡ ҡаты нәмәгә һуғылғанда яңғырап сыҡҡан тауышты белдергән һүҙ. *Зың итеү. Зың иттереү.* / Ҡолаҡта, башта сыңлаған, шуға оҡшаш тауышты белдергән һүҙ. *Ҡолағым зың итеп тора.*

**2.** *и. мәғ.* Зыңлаған тауыш. *Рельс зыңы.* ■ *Ысыҡ баҫты ҡарабойҙайҙы, бал ҡорттары зыңы туҡтаны.* Б. Бикбай.

**ЗЫҢҒЫЛДАТЫУ** *к.* **1.** Ҡабат-ҡабат зың иттереү, зыңлатыу. *Думбыраны зыңғылдата сиртеү.* ■ *Әхмәҙулла бабай ҡурайына һыу бөркөп зыңғылдатып өрөп алды ла, аҡрын ғына уйнап ебәрҙе.* Ә. Вахитов.

**2.** Яңғыратып тауыш сығарыу. *Зыңғылдата баҫып бейеү.*

**ЗЫҢҒЫЛДАУ** *к.* Ҡабат-ҡабат зың итеү. *Быяла зыңғылдай. Ҡыңғырауҙар зыңғылдай.* ■ *Ҡыҫҡа һәм аңлайышлы команда яңғыраны, яҡында ғына шпорҙар зыңғылданы.* Я. Хамматов.

**ЗЫҢҒЫЛДАШЫУ** *к. урт. кар.* **зыңғылдау.**

**ЗЫҢҒЫР** [1] *окш.* Ҡыңғырау йәки шундай башҡа нәмәнән яңғырап сыҡҡан тауышты белдергән һүҙ. *Зыңғыр итеү. Зыңғыр иттереү.*

**ЗЫҢҒЫР** [2] *и. диал. кар.* **сыңғырлаҡ** [2].

**ЗЫҢҒЫРАТЫУ** *к.* Зыңғыр иттереү; зыңғырлатыу. *Ҡыңғырау зыңғыратыу.*

**ЗЫҢҒЫРАУ** *к.* Зыңғыр итеү; зыңғырлау. *Телефон зыңғырай.*

**ЗЫҢҒЫРАШЫУ** *к. урт. кар.* **зыңғырау.**

**ЗЫҢҒЫРЛАТЫУ** *к.* Зыңғыр иттереү, зыңғыратыу. *Гармунсы гармунының ҡыңғырауын зыңғырлатып алды.* М. Тажи.

**ЗЫҢҒЫРЛАУ** *к.* Зыңғыр итеү; зыңғырау. *Ҡыңғырау зыңғырлай.* ■ *Гитара ҡылдарының зыңғырлауына егеттең аяҡтарынан алда ҡулдары бейей башланы.* «Ағиҙел», 1970, № 8. *Аттың ҡойроғо бер ҡыңғырауға һуғылған да, ҡыңғырау зыңғырлап киткән, ти* (Әкиәттән).

**ЗЫҢҒЫРЛАШЫУ** *к. урт. кар.* **заңғырлау.**

**ЗЫҢ-ЗЫҢ, зың да зың** *окш.* Ҡабат-ҡабат зың (1 мәғ.) иткән тауышты белдергән һүҙ. *Зың-зың иттереү.* ■ *Яҡты көн, татлы өн юҡ унда [зинданда], зың да зың .. бығауҙар сылбыры.* М. Кәрим. *Сәскәләрҙең башын өҙә-өҙә, зың-зың итеп пуля һибелде.* Ғ. Ғүмәр.

**ЗЫҢҠ** [1] *окш.* Бер генә тапҡыр ныҡ зың иткән өҙөк ҡалын тауышты белдергән һүҙ. *Зыңҡ итеп бәрелеү. Зыңҡ итеп барып төшөү.* ■ *Айтуған ҡалмаҡ батшаһының батырын күтәреп-тереп бәрҙе, ти. Теге батыр ергә зыңҡ итеп ҡалды, ти* (Әкиәттән).

**ЗЫҢҠ** [2] *с. һөйл.* Иң юғарғы. *Ағастың зыңҡ осо. Тауҙың зыңҡ түбәһе.*

**ЗЫҢҠА** *и. диал.* Сыңға.

**ЗЫҢҠЫЙ** *и. һөйл.* Берәй нәмәнең иң юғарғы осо, түбәһе. *Уҡ башаҡтарына оҡшаған ҡаяларҙың зыңҡыйында.. ағастар һерәйеп тора.* С. Ҡулибай. *[Бабсаҡ] бейек бер тауға килеп сыға. Уҡ-һаҙаҡтарын һалып, бер аҙ тын ала ла тауҙың нәҡ зыңҡыйына менеп, тирә-яҡҡа күҙ йөрөтөп сыға* (Әкиәттән).

**ЗЫҢҠЫЛДАТЫУ** *к.* Зыңҡ иттереү, зыңҡ иткән тауыш сығарыу. *Зыңҡылдата баҫыу.* ■ *Зыңҡылдатып бейеһәләр, ҡалтырап тора түшәм.* Ғ. Дәүләтов. *Үрәпсеп тора үрләстә ҡырлас яллы саптарым, зыңҡылдата, өҙә баҫып, сакма сағыр сапҡырым.* Х. Назаров.

**ЗЫҢҠЫЛДАУ** *к.* Ҡаты бәрелеп, һуғылып зың итеү. *Арҡалары менән ҡаҡ юлға зыңҡылдап барып төштөләр.* Ғ. Хәйри.

**ЗЫҢҠЫТЫУ** *к.* **1.** Ауыр тимер нәмә менән туҡтауһыҙ һуғыу, бәреү. *Зыңҡыта һуғыу.* ■ *Ай, Уралым, уҙған юлдарыңда өйөрмәле, ыжғыр елдәр бар. Ер зыңҡытҡан ҡурғаш ямғырҙар бар, ләхет һымаҡ ҡара көндәр бар.* А. Игебаев.

**2.** Зыңҡ иттереү, зыңҡ иткән тауыш сығарыу; зыңҡылдатыу. / Ныҡ итеп, бик ҡаты бәреү һ. б. *Зыңҡыта һуғыу.* ■ *Иштуған, тарт гармуныңды, баҫайым бер зыңҡыта.* Н. Ҡәрип.

**3.** Сатнатып ауырттырыу. *Зыңҡытып баш һыҙлап ҡуйҙы, иҫерек кеше һымаҡ күҙ алдары семәкәйләнде.* Н. Ҡәрип.

**ЗЫҢҠЫУ** *к.* **1.** Зыңҡ иткән тауыш сығарыу; зыңҡылдау. *[Кешеләр иҫкәрмәҫтән] арҡалары менән ҡаҡ юлға зыңҡыныулар.* Ғ. Хәйри.

**2.** *күсм.* Сатнап ауыртыу. *Уф, башым зыңҡый, аяҡ табандарым боҙ кеүек һалҡын.* М. Тажи.

**ЗЫҢЛАТЫУ** *к.* Зың иттереү; зың-зың иткән яңғырауыҡлы тауыш сығарыу. *Зыңлатып сәғәт һуҡты.* ■ *Зыңлатып салғы яныған тауыш ур-*

*манлы тау биттәренә барып каклыға.* С. Кулибай. / Яңғыратыу. *Зыңлатып курай уйнау.*

**ЗЫҢЛАУ** *к.* **1.** Зың итеү, зың-зың килеү. *Көслө тауышка тәзрәләр зыңлап тора.* ■ *Күҙелдәргә көмөш моң һалып, .. һуңғы кыңғырау зыңлай.* Р. Шәкүр. *Йүгәндең ауыҙлығы зыңлап китә.* Т. Йосопов. / Вашта йәки колакта сыңлау, яңғырап ишетелеү. *Юрған аҫтына инеп яткас та әлеге моңло көй колағымда зыңлап торҙо.* Н. Мусин.

**2.** *күсм.* Ауыртыу, сир йәки башка тәьҫирҙән шаулау, сыңлау (баш, колакка карата). *Колағым зыңлай.* ■ *[Бануҙың] башы ауыртып зыңлап тора, ашағыһы килә.* Ә. Вәли.

**ЗЫҢЛАШЫУ** *к. урт. кар.* **зыңлау** 1.

**ЗЫҢЫЛДАТЫУ** *к.* Зың-зың иттереү, зыңлатыу.

**ЗЫҢЫЛДАУ** *к.* Зың-зың итеү, зың-зың иткән тауыш сығарыу, зыңлау. *Капыл тышта караңғыла мылтык атылды. Зыңылданы тәҙрә быялаһы.* Р. Ниғмәти. *Быскыбыҙ уйнап тора, зыңылдап, зыйлап тора.* А. Игебаев.

**ЗЫҢЫЛДАШЫУ** *к. урт. кар.* **зыңылдау.**

**ЗЫР** *окш.* Шәп әйләнгән нәмәнән сыккан тауышты белдергән һүҙ. *Зыр итеү.*

♦ **Зыр килеү** *кар.* **зыр әйләнеү. Зыр кубыу** *шул ук* **зык кубыу** (*кар.* **зык**). **Зыр кыҙырыу** бер ерҙе лә калдырмай йөрөп сығыу. *Коро дала. Уны зыр кыҙырып, ажарланып елдәр һыҙгыра.* А. Игебаев. **Зыр әйләнеү** күҙ эйәрмәҫлек шәп итеп бер урында әйләнеү.

**ЗЫР-ЗЫР, зыр ҙа зыр** *окш.* Өҙөк-өҙөк зыр иткән тауышты белдергән һүҙ. *Зыр-зыр итеү.* ■ *Ниндәй йылғыр әйләнә сылбыр хәҙер. Өйрөлә сылбырҙа Иблис зыр ҙа зыр.* Ш. Вабич.

♦ **Зыр-зыр килеү** (*йәки* **әйләнеү**) зыр-зыр итеп бик шәп әйләнеү. *Ике башта тирмән әйләнә, зыр-зыр килә.* С. Агиш. *Өйҙәге зыр-зыр әйләнгән орсок тауышына тукылдатып сапкан балта тауышы кушыла.* Т. Хәйбуллин.

**ЗЫРК-ЗЫРК** *окш.* Зыркыуыт тауышын белдергән һүҙ. *Зырк-зырк итеү.*

**ЗЫРКЫЛДАУ** *к.* Зырк-зырк итеү.

**ЗЫРКЫЛДАШЫУ** *к. урт. кар.* **зыркылдау.** *Иртә генә тороп мин караһам, зыркылдашып оса зыркыуыт* (Халык йырынан).

**ЗЫРКЫУЫТ** *и.* Төп-төҙ оҙон моронло, көйөлдөләр ғаиләһенә караған һаҙ кошо. *Яҙ килгәнкәйҙәрен шунан беләм: зыркыуыттар килә зыр кубып* (Халык йырынан).

**ЗЫРЛАТЫУ** *к.* Зыр-зыр иттереп, бик шәп әйләндереү. *Кисәге кол — бөгөн эшсе-ижадсы, техниканы кулда уйната. Кара уга, ниндәй, ниндәй оҫта электрик бырау зырлата.* Ғ. Амантай. *Шәмсиә кулындағы орсоғон .. зырлатып әйләндереп ебәреп, дөйә йөнөн һуҙып-һуҙып иләй ине.* Һ. Дәүләтшина.

**ЗЫРЛАУ** *к.* Зыр итеү, зыр-зыр килеү. *Машиналар зырлап эшләп торһон, минут һайын бирһен файҙаһын.* Т. Йәнәби. *Машинаның арткы тәгәрместәре бер урында зырлап әйләнеп тик торҙо.* Р. Низамов. *Күгәүен ҙурлык кына кош һымак бер нәмә осоп сыға ла, зырлап әйләнеп, батшаның башын үтә тишеп, күҙҙән юк була* (Әкиәттән).

**ЗЫРЛАШЫУ** *к. урт. кар.* **зырлау.**

**ЗЫР-ТҮҢӘРӘК** *с. һөйл.* Бөтә радиустары ла тигеҙ түңәрәк; түп-түңәрәк. *Зыр-түңәрәк сокор.*

**ЗЫРЫЛДАК** *и.* Әйләндереп уйнай торған уйынсык.

**ЗЫРЫЛДАТЫУ** *к. кар.* **зырлатыу.** *Орсокто зырылдатыу.* ■ *Хисмәт Мәрйәм менән икебеҙҙе кушарлап .. кукрәгенә кыҫты ла бүлмә буйлап зырылдатып әйләндерҙе.* Ғ. Байбурин.

**ЗЫРЫЛДАУ** *к. кар.* **зырлау.** *Орсок зырылдай.* ■ *Оҫта кулында станок зырылдай, һөрән һала.* М. Сөндөклө. *Акъял батыр .. иргәйелдең башын өҙә сапкан. Баш тәгәрләп киткән дә, бер ерҙә зырылдап өйрөлә башлаған* (Әкиәттән).

**ЗЫРЫЛДАУЫК** *и. кар.* **зырылдак.**

**ЗЫРЯН** *и.* Коми халкының элекке атамаһы.

**ЗЫУ** *окш.* **1.** Бик шәп итеп осоп үткәндә сыккан тауышты белдергән һүҙ. *Зыу итеү.* ■ *Баш осонан зыу килешеп пулялар оса.*

**2.** *күсм.* Күмәк кеше һ. б. шаулағанда сыккан тауышты белдергән һүҙ. *Зыу итеп калыу.* ■ *Урамда, йорт тирәһендә зыу килеп уйнаусы бала-сағанан башка бер йән эйәһенең дә осрамауы беҙҙе ғәжәпкә калдырҙы.* С. Кулибай. *Зыу килеп өй беренсә шаршау эҙләйҙәр, таба алмайҙар, ти* (Әкиәттән).

**ЗЫУ-ҒӘЛӘМӘТ: зыу-ғәләмәт килеү** ашығып, өтәләнеп зык кубыу. *Мозафар, йылмайып, әсәһенең зыу-ғәләмәт килгәненә карап тора ине.* Н. Мусин.

**ЗЫУ-ЗЫУ, зыу ҙа зыу** *окш.* **1.** Нимәлер бик тиҙ хәрәкәт иткәнде, бер-бер артлы осоп үткәнде белдергән һүҙ. *Зыу-зыу килеү.*

**2.** Күмәк кеше һ. б. өҙлөкһөҙ шаулағанда сыккан тауышты белдергән һүҙ. *Зыу-зыу килеү.* ■ *Капыл шул сак баш осомда көслө тауыш зыу ҙа зыу. Әһә, бер күс осоп бара, кәрәк тимер зыңлатыу.* М. Уразаев.

**ЗЫУЛАТЫУ** *к. һөйл.* **1.** Бик тиҙ хәрәкәт итеү; елдереү, зыйлатыу. *Күҙ асып йомғансы .. айыу, бахырың, зыулатып тау түбәненә карай .. төшөп тә китте.* С. Кулибай.

**2.** *һөйл.* Зыуларға, шауларға юл куйыу. *Зыулатмағыҙ әле балаларҙы, тыйығыҙ.*

**ЗЫУЛАУ** *к.* **1.** Зыу итеү, зыу килеү. *Минаның, снарядтың һыҙғырып, зыулап килә башлауынан ук алғамы-арткамы, уңғамы-һулғамы төшөрөн белеп була.* С. Кулибай.

**2.** Тауышланыу, гөж килеү, гөжләү (күмәк кеше һ. б. карата). *Күс зыулап оса.* ■ *Йырла тиһәң, йырлайым, бер аҙырак йырым бар. Зыуламай тыңлағыҙ, аҙаматтар* (Кобайырҙан).

**ЗЫУЛАШЫУ** *к. урт. кар.* **зыулау.**

**ЗЫУЫЛДАТЫУ** *к. һөйл.* **1.** *кар.* **зыулатыу** 2.

**2.** *күсм.* Бик нык, тетеп эрләү. *Бына китә сәсрәп, бына китә зыуылдатып атайымды Әхмәтхужа бабай.* В. Нафиков.

**ЗЫУЫЛДАУ** *к.* **1.** Зыу-зыу иткән тауыш сығарыу, зыулау. *Снаряд ярсыктары баш осонан зыуылдап осоп тора.* ■ *Кеүәтле машина зыуылдап уҙып китте.* Ә. Вәли.

**2.** *һөйл. кар.* **зыулау** 2.

**ЗЫУЫЛДАШЫУ** *к. урт. кар.* **зыуылдау.** *Куныҙҙар эңер еткәс, зыуылдашып осоп йөрөй.*

**ЗЫЯ** [*ғәр.*] *и. иҫк.* **1.** Яҡтылыҡ, нур. *Зыя булыу. Зыя итеү.* ■ *Һине лә зыяһынан мәхрүм ҡуймаҫ башҡаларҙы нурландырған нурлы ҡояш.* С. Яҡшығолов.

**2.** (*баш хәреф менән*) Ир-ат исеме.

**ЗЫЯДӘ** *с. иҫк. кит.* Артыҡ, үтә күп. *Был ике сифат [ялағайлыҡ һәм һүҙ йөрөтөү] Мусала камил булған кеүек, бының өҫтөнә зыядә мәкерле, ялғансы, боҙоҡ күңелле .. ине.* Р. Фәхретдинов. **Дәки зыядә** тағы ла күберәк. **Хәтдин зыядә** кәрәгенән артыҡ күп. *[Кешенең] бүтән тәрбиәһе хәтдин зыядә, нисек ҡоштар бала аҫрай бер ояла.* Ш. Әминев.

**ЗЫЯЛЫ** *с. иҫк.* **1.** Нурлы. *Зыялы донъя.*

**2.** *күсм.* Белемле. *Зыялы кеше.* ■ *Ана, урта тошта, бер яҡ стенаға һыйына биреп, бер тирәгә тупланғандар элекке мәҙрәсә хәлфәләре. Бында йыйылғандарҙың барына ҡарағанда ла зыялы, мәҙәни халыҡ улар.* Ф. Иҫәнғолов. *Әйҙә Әхсән Ҡормашый, выж! Матбуғатта тормасы. Ят ауылда, бул зыялы бер һабансы, тырмасы.* Ш. Бабич.

**ЗЫЯЛЫЙ** *и. иҫк.* Белемле, уҡымышлы кеше. *Хәҙер тәрәккиәт заманы. Башҡорттарҙан да зыялыйҙар сығырға ваҡыт.* Б. Бикбай. *Эй зыялый! Йөрөмә ситтә, һин дә кил кер кәртәгә, ил ғазап сиккән ваҡыт милләтселекме мәртәбә?* Б. Мирзанов.

**ЗЫЯЛЫЙЛЫҠ** *и.* Зыялы кешегә хас сифат. *Б. Бикбайҙың бөтә торошонда ябайлыҡ, ихтирамлылыҡ булыу өҫтөнә ниндәйҙер күҙгә артыҡ бәрелмәгән зыялыйлыҡ, зирәклек бар.* Ә. Вахитов.

**ЗЫЯН** [*фарс.*] *и.* **1.** Насар һөҙөмтә биргән кире тәьҫир; зарар. *Зыян тейеү. Зыян эшләү.* ■ *Артыҡ шаярыу күп ваҡыт үҙеңә зыян килтереү менән бөтә.* Ғ. Хәйри. *Алланың рәхмәтендә булғыры. Һәйбәт әҙәм ине Ямал. Эшмәкәр ине. Әҙәмгә зыяны теймәне.* Һ. Дәүләтшина.

**2.** Ниндәйҙер материаль юғалтыуға килтергән кире йоғонто; ҡаза, зарар. *Зыян күреү.* ■ *БАССР граждандары дәүләт һәм йәмғиәт ойошмаларының, шулай уҡ вазифалы кешеләрҙең үҙ хеҙмәт вазифаларын башҡарғанда законһыҙ эш итеүҙәре арҡаһында килтергән зыянды түләтергә хаҡлы.* Башҡорт АССР-ының Конституцияһы, 1984.

□ **Зыян итеү** 1) насар һөҙөмтәле тәьҫир яһау. *Һаулыҡҡа зыян итеү;* 2) материаль юғалтыуға килтереү. *Аждаһа зыян итә башлаһа, малды, әҙәмде алһа, болот килеп, үҙен ел-дауыл күтәреп алып китә, ти.* Ғ. Ибраһимов.

♦ **Зыян итмәҫ** (*йәки* **булмаҫ**) файҙаға ғына булыр, насар түгел. *[Үмәр:] Ала һыйырҙы ла, танаҡайҙы ла ҡышлатып, киләһе йыл ике быҙаулы һыйыр яһап булғанда зыян итмәҫ ине.* Һ. Дәүләтшина. **Зыян юҡ** кешене тынысландырырға теләп, ҙур зарар юҡ тигән мәғәнәлә әйтелә.— *Ярар, бәхетем шулдыр. Зыян юҡ.* Т. Хәйбуллин.

● *Биш тинлек ҡуян, ун тинлек зыян.* Мәҡәл. *Һүҙен һөйләй белмәгән үҙенә зыян килтергән.* Мәҡәл.

**ЗЫЯНДАШ** *и. һөйл.* Быума сире һәм уның ваҡыт-ваҡыт ҡабатланған өйәнәге. *Зыяндашы ҡуҙғалған.*

● *Биҙгәктән ҡотолған зыяндашҡа тотолған.* Мәҡәл.

**ЗЫЯН-ЗӘҮРӘТ** *и. йыйн. иҫк.* Мал-мөлкәт, тормош-көнкүреш һәм башҡа нәмәгә насар тәьҫире тейгән йәки материаль юғалтыуға килтергән төрлө хәл; бәлә-ҡаза. *Зыян-зәүрәт тейеү.* ■ *Һарыбай төнгө постың тыныс үткәнен, зыян-зәүрәт юҡлығын хужаһына белдерергә теләгәндәй, әле бер, әле икенсе яғына сығып иркәләнә[де].* С. Ҡудаш.

**ЗЫЯНЛАНЫУ** *ҡ.* Материаль юғалтыуға юлығыу, зыян, ҡаза күреү. *Өйҙәре янып, зыянланып торалар.*

**ЗЫЯНЛАУ** *ҡ.* **1.** Ниндәйҙер сәбәптән үлеү (малға ҡарата); ҡазаланыу. / Йыртҡыс йәнлек тамаҡлап үлтереү, ҡазалау (малды). *Бүре һыйырҙы зыянлап киткән.*

**2.** Зыян эшләү, зарарлау. *Алмағасты сысҡан зыянлаған.*

**ЗЫЯНЛЫ** *с.* Эшкә, тормошҡа кире тәьҫирле; насар һөҙөмтәле; *киреһе* зарарлы. *[Эшселәр] байҙарҙың милли эштәренә ҡатнашмаған, киреһенсә, улар менән көрәшкән, үҙҙәренә кем зыянлы, кем файҙалы икәнлеген яҡшы айырған.* З. Шәрҡи.

**ЗЫЯНЛЫҠЛЫ** *с.* Матди юғалтыуға килтергән; файҙаһыҙ. *Зыянлыҡлы хужалыҡ.*

**ЗЫЯНЛЫҠҺЫҘ** *с.* Матди юғалтыуға килтермәй торған; килемле. *Зыянлыҡһыҙ хужалыҡ.*

**ЗЫЯРАТ** [*ғәр.*] *и.* Үлгән кешеләрҙе күмә торған урын; ҡәберлек. *Мосолман зыяраты.* ■ *[Әхмәҙулла:] Халыҡ бына ошо имәнлектә яңы зыярат яһаны, [яу батырҙарын] күмергә бөтә халыҡ килде.* Ә. Вахитов.

♦ **Зыярат итеү** (*йәки* **ҡылыу**) 1) күрергә, ҡарарға, хәл белергә барыу. *Был урынды бер нисә тапҡыр зыярат итеп, бөтә ҡанундарын .. үҙләштереп бөткән извочиктар аттарын урынлаштырып, арбаларындағы .. [нәмәләрен] бушата башланы.* И. Насыри; 2) изге урынды йәки нәмәне барып күреп, дини йола атҡарыу. *[Әбей:] Бер нисә көндән [тәүге көрьәнде] Сәмәрҡәндкә оҙаталар икән. Ана шуны зыярат ҡылырға, ҡарай барырға мөмкин тинеләр.* С. Агиш.

**ЗЫЯФӘТ** [*ғәр.*] *и. иҫк. кит.* Һый-хөрмәт. □ **Зыяфәт итеү** һый-хөрмәт күрһәтеү; һыйлау; ҡунаҡ итеү.

**ЗӘБУР** [*ғәр.*] *и. дини* Таураттың бер өлөшө булған дини йырҙар китабы.

**ЗӘҒЕМ** [*ғәр.*] *и. иҫк. кит.* Фараз, уй. *Һүҙегеҙ мөбәййәндер зәғемегеҙҙә.* Аҡмулла.

**ЗӘҒИФ** [*ғәр.*] *с.* **1.** Тәненең берәй ағзаһы имгәнгән; ғәрип. *Зәғиф кеше. Зәғиф булып ҡалыу. // Зәғифкә әйләнеү. // Аяғы зәғиф.*

**2.** Үҫә алмаған, имгәнеп насар үҫкән. *Зәғиф ағас.* ■ *Нефть яткылыктары өҫтөндә ҡайсаҡ зәғиф, ә ҡайсаҡ ғәҙәттән тыш ҙур булып үҫкән төрлө үҫемлектәрҙе күрергә була.* Д. Бураҡаев.

**3.** *күсм.* Хәлһеҙ, көсһөҙ. *Өммәтҡол ағай иҫән саҡта шаулап торған тормош ҡапыл һүнде, ҙур ҡуралы йортта ике зәғиф кенә йән әйәһе [Хәбибә еңгә менән Әлимә] ҡалды.* Д. Юлтый. *Малайҙың зәғиф тауышы байтаҡ ваҡыттан*

*һуң да колағымда иңрәп торҙо.* «Ағиҙел», 1968, № 12.

**4.** *күсм.* Йомшаҡ тәбиғәтле, ихтыярһыҙ. *Зәғиф күңел.* ■ *Ишандың .. күҙҙәре һуң дәрәжәлә үткер, тура ҡарағанда зәғиферәк кешеләрҙең башы эйелмәй ҡалмай.* М. Ғафури.

**5.** *күсм.* Камиллыҡҡа етмәгән, өлгөрөп бөтмәгән. *Һиңә дан йырлар өсөн телем зәғиф, һөйөүемде әйтергә һүҙем зәғиф.* Салауат Юлаев.

♦ **Аҡылға зәғиф** *ҡар.* **аҡыл.**

**ЗӘҒИФЛЕК** *и.* **1.** Тәндәге физик кәмселек; ғәриплек. *Дауаланыуға ҡарамаҫтан, айырым осраҡтарҙа һаулыҡ яҡшырмай: сир йә хроник формаға күсә, йә аяныс ҙәғифлек барлыҡҡа килә.* В. Ғүмәров.

**2.** *күсм.* Аң, аҡыл кәмселеге. *Аҡылға зәғифлек тыумыштан йәки берәй ауырыуҙан һуң булырға мөмкин.* М. Ғатауллин.

**ЗӘҒИФЛӘНДЕРЕҮ** *к.* Зәғиф итеү, ғәрипләндереү.

**ЗӘҒИФЛӘНЕҮ** *к.* **1.** Имгәнеп зәғифкә әйләнеү, ғәрипләнеү. *[Зәһиҙулла:] Әсәй, унан да ҡаты зәғифләнеп ҡалалар бит. Ана Исмаҡ тәмәке һыуы эскән дә, .. ҡан төкөрөп йөрөй, ти.* Һ. Дәүләтшина. *Малай тупты ҡағып ебәрә, ул ҡайныһының ҡулына, ҡайныһының аяғына тейеп, емереп сығып китә. Күп малай зәғифләнә* (Әкиәттән).

**2.** Хәлһеҙләнеү, көсһөҙләнеү. *Тауышы бөтөнләй зәғифләнгән.* ■ *Бер-ике йыл эсендә әсәйең бөтөнләй эштән сыҡты, сәләмәтлеге зәғифләнде, .. ауырыуға һабышты.* Б. Мирзанов.

**3.** *күсм.* Кешенең рухи көсөнә, һәләтенә зыян килеү. *Иҫ-аҡылы зәғифләнгән.*

**ЗӘҒИФЛӘТЕҮ** *к. йөкм. ҡар.* **зәғифләү.**

**ЗӘҒИФЛӘҮ** *к.* **1.** Тәнгә, берәй ағзаға зыян килтереү; имгәтеү, ғәрипләү. *Төтөндәрҙең зәһәр ағыуҙары зәғифләгән ике күҙемде.* Б. Вәлит.

**2.** *күсм.* Аҡыл, уйлау һәләтенә зыян килтереү. *Аҡылды зәғифләү.*

**ЗӘҒФЕРӘН** [*ғәр.*] *и.* **1.** Һуған төплө, ҡыяҡ япраҡлы, ҡыҙғылт күк төҫтәге ҡыңғырау сәскәле көнъяҡ үләне (сәскәһенең инәлеге кулинарияла, парфюмерияла һары төҫ һәм тәмле еҫ биреү өсөн ҡулланыла). / Өйҙә үҫтерелгән шул үлән һымаҡ гөл. *Зәғферән гөлө.*

**2.** (*йәки* **зәғферән һарыһы**) Асыҡ һары төҫ. *[Бөжәктәр] .. зәғферән һарыһына буялған ҡамыл төптәрендә мыж килә.* И. Ғиззәтуллин.

□ **Зәғферән булыу** һарғайыу, һарыға һабышыу. **Зәғферән итеү** һарғайтыу, һарыға һабыштырыу. *Мөхәббәт әйтә: «Фарһад — минең гөлөм, зәғферән итермен алһыу йөҙөн».* М. Харис.

**ЗӘҒФОРАН** *и.* **1.** *ҡар.* **зәғферән.**

**2.** (*баш хәреф менән*) Ир-ат исеме.

**ЗӘЙТҮН** [*ғәр.*] *и.* **1.** Ваҡ ҡына аҡһыл сәскәле, ҡауырһын япраҡлы мәңге йәшел көнъяҡ ағасы. *Зәйтүн урманы.* ■ *Беҙҙе ҡышҡы буран дар ажғырғанда, ул ерҙәрҙә [Вьетнамда] зәйтүн ағастары сәскә ата.* М. Кәрим. *Өй артындағы баҡсала зәйтүн тигән гөлдәр бар* (Халыҡ йырынан).

**2.** Шул ағастың май бирә торған оҙонсараҡ ваҡ емеше (ашты тәмләү һәм ҡиммәтле май алыу өсөн ҡулланыла). *Зәйтүн емеше.* **Зәйтүн майы** зәйтүн емешен беренсе ҡат һығып алынған сифатлы май.

**3. зәйтүн һымаҡтар** *бот.* таж япрағы икегә бүленеп торған суҡ сәскәле, ҡара-ҡаршы сыҡҡан ҡауырһын япраҡлы ағастар ғаиләһе (йәсмин, сирень, сәй, зәйтүн ағасы һ. б. инә).

**4.** (*баш хәреф менән*) Ир-ат исеме.

**ЗӘЙТҮНГӨЛ** *и.* **1.** Төптән үк ҡыяҡ булып сыҡҡан эре киң япраҡлы, һабағының осонда эре һарғылт ҡыҙыл, ҡыҙыл йәки ҡуйы һары сәскәһе булған декоратив үҫемлек, гөл. *Күңелемдең баҡсаһында зәйтүнгөл алһыу бурҙат сәскә атты тағы ла.* К. Кинйәбулатова.

**2.** (*баш хәреф менән*) Ҡатын-ҡыҙ исеме.

**ЗӘКАТ** [*ғәр.*] *и. ҡар.* **закат.**

**ЗӘҠҠУМ** [*ғәр.*] *и. иҫк.* **1.** Ислам диненсә, тамуҡтағы ағыулы ағас.

**2.** *күсм.* Үтә нык әсе, зәһәр ағыу. *Алманым да, эсмәнем дә зәһәр зәккум тостарын.* Х. Ғәбитов.

● *Ҡатын яҡшы булһа — ҡатын, яман булһа — зәккум.* Әйтем.

**ЗӘҠҠУМЛЕ** *с. иҫк.* **1.** Ағыулы, ағыу һалған. *Зәккумле шарап.*

**2.** *күсм.* Зәһәр, әсе. *Нишләйем һуң? Зәккумле хәсрәттәр менән күңелем яна.* Ш. Вабич.

**ЗӘЛ** *и. һөйл.* Ярамаған эштең шауҡымы; ҡасафат. *Зәкиҙең эске зәленән башы шартларҙай булып ауырта.* В. Нафиков.

**ЗӘМ** *и. диал.* Сәм. *Зәмгә тейеү. Зәм килеү.*

**ЗӘМБӘЛӘ** *и. диал.* Зәңге.

**ЗӘМЗӘ** *и. диал.* Зәржә.

**ЗӘМЗӘМ** [*ғәр.*] *и.* **1.** Мәккәлә Кәғбә янындағы бер ҡоҙоҡ исеме (мосолман дине буйынса, һыуы изге, шифалы һанала). *Зәмзәм һыуы.* ■ *[Дәрүиш:] Пәйғәмбәрҙең изге кәбер ташын үҙ ҡулдарым менән һыйпап, зәмзәм ҡойоһонан тамсы-тамсы һыу эсеп килгән әҙәммен мин.* М. Кәрим.

**2.** *күсм.* Йәнгә рәхәтлек, еңеллек килтергән нәмә. *Кем тейҙерҙе иренемә был мәңгелек зәмзәмен. Кем иҫертте, кем татытты был мөхәббәттең тәмен?* С. Ҡудаш. *Раббым, үҫһен был балам, .. етһен кеше булһын ғына, донъяның шатлыҡ вә рәхәт зәмзәмен йотһон ғына.* М. Сабит.

♦ **Зәмзәм һыуы** *шаяр.* иҫерткес эсемлек, шарапҡа ҡарата әйтелә. *Ирҙәр ярыша-ярыша зәмзәм һыуы йота.* А. Игебаев. **Зәмзәм ямғыры** *диал.* йәйсән.

**ЗӘМИН** [*фарс.*] *и. иҫк. кит.* **1.** Тупраҡ, ер. *Башҡортостан еренең зәминен дүрт төргә бүлеп була.* Ғ. Ғисмәти.

**2.** Ер йөҙө, донъя. *Бирмә яҡты, яҡты — мин. Үт кәрәк булһа, уны минән генә алһын зәмин.* М. Ғафури.

**3.** *күсм.* Ниҙелер ныҡытҡан, дәлилләгән нәмә; ерлек, нигеҙ. *[Адвокат:] Прокурор иптәш язаны еңеләйтеү өсөн зәминдәр юҡ, тип раҫлай. Ә минеңсә, ундай зәминдәр .. күп.* Ғ. Әмири.

**ЗӘМҺӘРИР** [*ғәр.*] *и. иҫк.* Әсе, сатлама һыуыҡ. *Ҡыш зәмһәрире.* // *Зәмһәрир ел.* ■ *Юҡ бүрек ҡар зәмһәриренән яланғас баш туңа.* Б. Мирзанов. *Һунде, һуҡты йәш йөрәкте зәмһәрирҙең һалҡыны.* Ғ. Иҫәнбирҙин.

● *Ҡыштың зәмһәриренә тейен дә бер тоҡ сәтләүек йыйған.* Әйтем.

**ЗӘМҺӘРИРЛЕ** *с. иҫк.* Ныҡ, сатлама һыуыҡ. *Зәмһәририрле ҡыштың йөрәгенә уттар баҫып көслө ел килә.* Ғ. Мәсғүт.

**ЗӘН** [*фарс.*] *и. иҫк. кит.* Ҡатын-ҡыҙ. *[Нәфселе] бүтәндә хәсиәтте бар тип белмәҫ, үҙенә хәсән зәнде хәсер ҡылһа.* Аҡмулла.

**ЗӘНБӘК** *и. диал.* Ләлә.

**ЗӘҢГЕ** [*рус.* цинга] *и.* Теш ите сереп, ҡан һауып, хәлде бөтөрә торған яман ауырыу (аҙыҡта витамин етешмәгәндән була).

♦ **Зәңге ҡасырыу** яҙ көнө, «зәңге ҡас, иҙел кис, иҫке ауыҙ, яңы аш, сирем-сирпәтем — сирмешкә, һаулығым-байлығым үҙемә», тип йыуа, ҡуҙғалаҡ һ. б. ҡабыу.

**ЗӘҢГЕЛЕ** *с.* Зәңге менән ауырыған. *Зәңгеле кеше.*

**ЗӘҢГЕҮ** *к. диал.* Сәңгеү.

**ЗӘҢГӘР** *с.* Спектрҙа йәшел менән күк араһындағы төҫкә тап килгән. *Аҡһыл зәңгәр. Асыҡ зәңгәр. Зәңгәр буяҡ. Зәңгәр күҙ. Зәңгәр күк йөҙө. Зәңгәр күлдәк. Зәңгәр тулҡын. Зәңгәр төтөн.* ■ *Күл-йылғаларым һыу менән тулы һәм диңгеҙҙәрем зәңгәр тулҡынлы.* М. Хәй.

♦ **Арыш** (*йәки* **баҫыу) зәңгәре** *кар.* **зәңгәрсуҡ. Зәңгәр сәскә** *һөйл.* зәңгәрсуҡ. **Тугай зәңгәре** туғайҙа, аҡланда үҫә торған зәңгәр сәскәле үлән.

**ЗӘҢГӘРЛЕК** *и.* **1.** Саф зәңгәр төҫ. *Күҙҙәремдә минең зәңгәрлек юҡ.* М. Сиражетдинов.

**2.** Зәңгәр бушлыҡ, асыҡ күк йөҙө. *Болот араһынан күлөп күя яулыҡ саҡлы ғына зәңгәрлек.* Р. Бикбаев.

**ЗӘҢГӘРЛӘНЕҮ** *к.* **1.** Зәңгәр төҫкә инеү. *Миәс буйҙарында нур арта. Зәңгәрләнеп, кесерәйеп беҙҙән сигенгәндәй була Уралтау.* К. Кинйәбулатова.

**2.** Зәңгәр булып күренеү. *Алыҫта Йөрәсем тауы күренә. Уның итәгендәге урман зәңгәрләнеп йәйелеп ята.* С. Агиш.

**ЗӘҢГӘРЛӘТЕҮ** *к.* Зәңгәр итеп күрһәтеү; зәңгәр төҫ биреү. *Алыҫ-алыҫҡа һуҙылып киткән Нарыҫ тауҙарын зәңгәрләтеп таң атты.* Ә. Зәйнуллин. *Зәңгәр һауа, зәңгәр болот зәңгәрләтә диңгеҙҙе* (Халыҡ йырынан).

**ЗӘҢГӘРЛӘҮ** *к.* **1.** Зәңгәр төҫлө итеү. *Зәңгәрләп буяу.*

**2.** Зәңгәр төҫкә индереү, зәңгәр төҫ биреү. *Диңгеҙҙе зәңгәр күк зәңгәрләй.*

**ЗӘҢГӘРСУҠ** *и. бот.* Ҡатмарлы сәскәләләр ғаиләһенә ингән зәңгәр сәскәле ҡый үләне.

**ЗӘҢГӘРҺЫУ** *с.* Аҡһыл зәңгәр, зәңгәргә тартым. *Тәбиғәт ялангасланган, күҙ алымы ерҙән йәйелеп ятҡан йәйге зәңгәрһыу күренештәр ҙә хәҙер инде тоноҡ бер төҫкә әйләнгән.* М. Тажи. *Уның зәңгәрһыу күҙҙәре күмөшләнеп күренгән Иҙел өҫтөндә.* Ғ. Хәйри.

**ЗӘҢГӘРҺЫУЛАНЫУ** *к.* Зәңгәрһыу төҫ алыу, зәңгәрһыу булып күренеү. *Көнсығыш яҡ зәңгәрһыуланып яҡтыра башланы.* Н. Мусин.

**ЗӘҢГӘРҺЫУЛАТЫУ** *к.* Зәңгәрһыу итеп күрһәтеү, зәңгәрерәк төҫ биреү. *Таң һарыһы ҡар өҫтөн зәңгәрһыулатып ебәрҙе.* Ғ. Шәрипов.

**ЗӘҢГӘРӘЙЕҮ** *к.* Зәңгәр төҫ алыу, зәңгәр төҫкә инеү. *Алыҫта тауҙар зәңгәрәйеп күренә.* Ә. Вали.

**ЗӘҢКЕ** *с. диал.* Сәкеш. *Зәңке башлы йылан.*

**ЗӘҢКЕҮ** *к. диал. кар.* **сәңгеү.** *Зәңкеп өшөү.*

**ЗӘҢКӘЛТӘЙ** *и. диал.* Сатнама һыуыҡ.

**ЗӘР** [1] [*фарс.*] *и. иҫк.* Алтын.

● *Зәр ҡәҙерен зәргәр белер.* Мәҡәл.

**ЗӘР** [2] *с. диал. кар.* **зәһәр** 6. *Зәр саҡ. Бына тигән зәр егет.*

**ЗӘРГӘР** [*фарс.*] *и. иҫк.* Алтын-көмөштән төрлө нәмә эшләгән оҫта; көмөшсө.

● *Зәр ҡәҙерен зәргәр белер, һүҙ ҡәҙәрен сәсән белер.* Мәҡәл.

**ЗӘРЖӘ** *и.* Иртә яҙ сыҡҡан ашарға яраҡлы үлән; сәрҙә.

**ЗӘРҠӘН** [*фарс.*] *и. кар.* **зәргәр.**

**ЗӘРЛЕ** *с.* Алтын уҡалы. *Зәрле таҡыя.*

**ЗӘРЛӘНЕҮ** *к. төш. кар.* **зәрләү.**

**ЗӘРЛӘТЕҮ** *к. йөкм. кар.* **зәрләү.**

**ЗӘРЛӘҮ** *к.* **1.** Алтынлау, алтын ялатыу.

**2.** Алтын уҡа менән сигеү. *Түбәтәйҙе зәрләү.*

**ЗӘРРӘ** [*ғәр.*] *и.* **1.** Бәләкәй генә бер бөртөк; остоҡ. *Зәррәләй нур, яҡтылыҡ юҡ, дөм ҡараңғы төн ине.* С. Ҡудаш. **Зәррә ҡәҙәр** (*йәки* **тиклем, саҡлы, хәтле**) бик әҙ генә, әҙ генә лә; бик бәләкәй. *Минең зәррә ҡәҙәре лә шигем юҡ, бына күреп тор, борсаҡ ишелеп уңасаҡ.* Ә. Гәрәев. *Зәррә ҡәҙәр нур юҡ дошманыма, дуҫҡа һалҡын таш юҡ йөрәктә.* С. Кулибай. **Зәррә миҡдар** *иҫк. кар.* **зәррә ҡәҙәр.** *Зәррә миҡдар ауырлыҡтың улыңа киләсәге башыңа килмәнеме ни, әсәкәйем?* Ә. Танғатаров.

**2.** *диал.* Күҙ кешелеге (*кар.* **кешелек** [2]). *Кешенең күҙендә зәррә төрлөсә була.*

**ЗӘРРӘСӘ** *с.* Бик әҙ, бик бәләкәй. *Унда зәррәсә хәйлә, мәкер юҡ.* М. Сабит.

**ЗӘРӘНӘ** *и. диал.* Зәржә. *Зәрәнә ашы.*

**ЗӘУАЛ** [*ғәр.*] *и. иҫк.* **1.** Нәмәнең ахыры, юҡҡа сығышы. *Һәр кәмалдың бер зәуалы бар.* Д. Юлтый.

**2.** Үлем.

● *Илсегә зәуал юҡ.* Әйтем.

**ЗӘҮЕК** *и. диал.* Зауыҡ.

**ЗӘҮЕР** *и. иҫк.* Нәҫел.

● *Аш яҡшыһы — ҡарта, зәүеренә тарта.* Мәҡәл.

**ЗӘҮЖ** [*ғәр.*] *и. иҫк. кит.* Ир (үҙ ҡатынына ҡарата). *И, минең ғәзизем, яҡлаусым! Вай, минең мөхтәрәм зәүжем!* Р. Фәхретдинов.

**ЗӘҮЖӘ** [*ғәр.*] *и. иҫк. кит.* Ҡатын (үҙ иренә ҡарата). *— Был ханым беҙҙең зәүжәбеҙ,— тине Хөсәйенов.* С. Агиш.

**ЗӘҮЖӘИ** [*ғәр.*] *с. иҫк. кит.* Ир-ҡатынға ҡағылышлы.

♦ **Зәүжәи мөкәррәмә** хөрмәтле ҡатын.

**ЗӘҮЖӘМ** [*ғәр.*] *и. кар.* **силсә** 1. *Зәүжәм зәхмәте.*

**ЗӘҮМӘТ** *и. диал.* Рәхәтлек.

**ЗӘҮРӘТ** [*рус.* заурядный] *с. тар.* Ғәскәри дәрәжәһе булмаһа ла ғәскәри вазифа башҡарған. *Зәүрәт прапорщик. Зәүрәт офицер. Зәүрәт сотник.*

**ЗӘХМӘТ** [*ғәр.*] *и.* **1.** Тән һәм йән ғазабы; ыҙа яфа. *Зәхмәт сигеү.* ■ *Күңел кайтты хә-*

*ҙер шатлыҡ, азатлыҡты көтөүҙәрҙән, күреп михнәт тә, зәхмәт, ләззәт менән йәш түгеүҙәрҙән.* М. Сабит. *Донъя шул был: бар уның рәхәт яғы, зәхмәт яғы.* Ш. Бабич.

**2.** *иҫк.* Ен, шайтандан килгән ауырыу; сир. *Үләт зәхмәте.* **Зәхмәт ҡағылыу** (*йәки* **тейеү, һуғылыу**) боронғо хөрәфәт буйынса, ен, шайтан һ. б. яуыз заттар тәьҫире арҡаһында ауырыу. *Ул [карсыҡ] Мәфтуха апайға ишек тотҡаһын сайҡап эсерҙе, ҡыҙығыҙға зәхмәт ҡағылған тип, ниндәйҙер доғалар уҡып, апайҙың биттәрен яланы.* Ғ. Минһажев.

**3.** *күсм.* Кире тәьҫир, шауҡым. *Һәммәһен мәжнүн итеп көйгән «Дин вә мәғишәт» зәхмәте.* Я. Юмаев.

♦ **Зәхмәт һуҡҡыр** ҡарғағанда, шелтәләгәндә әйтелә. *Күҙҙәре ни тора, зәхмәт һуҡҡырының! Һинең кеүек егеттәрҙе бейетерлек шул.* Д. Исламов.

**ЗӘХМӘТЛЕ** *с.* **1.** Ғазап килтергән; ыҙа, яфа тыуҙырған. *Зәхмәтле тормош.* ■ *Зәхмәтле гәрәсәттең шауҡымы уға ла һуғылып өлгөрҙө.* «Әҙәби Башҡортостан», 1960, № 8.

**2.** *иҫк.* Зәхмәт ҡағылған, насар сирле. *Зәхмәтле бала.*

**3.** *һөйл.* Йоғошло сир, зәхмәт булған, сихырлы. *Зәхмәтле урын.*

**ЗӘХМӘТЛӘНЕҮ** *ҡ. һөйл.* Ыҙаланыу, яфаланыу. *Ҡыш утынһыҙ зәхмәтләнеп сыҡтым.*

**ЗӘҺЕҮ** [1] *и. һөйл.* Шауҡым, зәл. *Әллә нисә көн ауырып йөрөп тапалып тукмалған һымаҡ һиҙҙем үҙемде. Шуның зәһеүе зиһенгә, иҫкә, телгә лә тәьҫир итте.* «Башҡортостан ҡыҙы», 1969, № 6.

**ЗӘҺЕҮ** [2] [*гәр.*] *с. һөйл.* **1.** Күҙҙең яуын алырлыҡ асыҡ; сағыу. *Зәһеү биҙәк. Зәһеү төҫ.*

**2.** Хайран ҡалырлыҡ, һоҡланырлыҡ. *Зәһеү белем. // Зәһеү килеп сыҡты.*

**ЗӘҺӘР** [*фарс.*] *и.* **1.** Ағыу. *Һыуға зәһәр һалыу.* ■ *Ҡараҡөләмбәт арыҫланды .. алмас башлы һаҙаҡ уҡ зәһәренән үлеп ҡалған тип белде инде.* «Күсәк». *Бер сәскәгә зәһәр атыу менән баҡсалағы гөлдәр шиңерме?* Д. Юлтый. *Көлгә әйләнде гөлдәр йөрәгемдә, ул көл зәһәр булды, ағыу булды, мәңге ағыу булды дошманға.* Б. Ишемғол. / *с. мәғ.* Зарар килтерә торған, ағыулы. *Зәһәр матдә.* ■ *Һинең ерең зәһәр төтөн йотоп, сәсәй-сәсәй ауыр тын ала.* М. Кәрим.

**2.** Көслө нәфрәт, асыу. *Зәһәр менән ҡысҡырыу.* ■ *[Башлыҡ] сәнсеп һөйләй меҫкен ҡарт эшсегә зәһәр ҡатыш әсе һүҙ менән.* М. Ғафури. **Зәһәр сәсеү** асыу менән ярһыу. *Күҙеңдә ас егет, бул ҡаһарман, зәһәр сәсеп ажғыр.* Ш. Бабич. / *с. мәғ.* Уҫал, яуыз. *Зәһәр дошман. Зәһәр ҡатын. Зәһәр булыу.* ■ *Һинең телең йомшаҡ булһа ла эсең зәһәр.* Ш. Шәһәр.

**3.** Үҙәккә үтерлек әсе һыуыҡ. *Ҡыш зәһәре. // Зәһәр һыуыҡ. Зәһәр ел.* ■ *Боҙло һыуҙың зәһәре үҙәккә үтә, йөрәк туңа.* Ҡ. Ибәтуллин. *Ҡара төндә онотторҙоң ай хаҡында, зәһәр ҡышта онотторҙоң май хаҡында.* М. Кәрим. *Көҙгө зәһәр ел нисәмә көндәр буйына ҡоторона.., ыжғыра.* Б. Хәсән.

**4.** *с. мәғ.* Йөрәкте әрнетерлек әсе, ауыр (һүҙгә ҡарата). *[Ҡатын:] Бала сағымда ла, үҙем әсә булғас та, бынан да зәһәрерәк һүҙҙе ишетмәнем мин кеше ауыҙынан.* Ғ. Әхмәтшин. **Зәһәр телле** әсе итеп әйтә торған, уҫал кешегә ҡарата әйтелә.

**5.** *с. мәғ. күсм.* Ҡеүәтле, көслө. *Зәһәр эсемлек.* ■ *Зәһәр шарапмы ни хуш еҫтәре! Бындай таңда ҡалай йоҡларға.* Р. Ғарипов.

**6.** *с. мәғ.* Бик шәп, бынамын мигән. *[Мәрйәм]: Бер айлыҡ получкамды ла йәлләмәҫ инем — тектерер инем зәһәр бер күлдәк.* Ш. Янбаев. *Күл уртаһында бер бик зәһәр баҡса тора, ти* (Әкиәттән).

**7.** *р. мәғ.* Бик, бик ныҡ, үтә. *Зәһәр үткер. Зәһәр өҫта һөйләшеү. Зәһәр ҡыҙып китеү.* ■ *[Тайфуров] зәһәр уҫал бер әҙәм.* М. Тажи. *Миңлеғата .. ҡатыны Сәғиҙәнең зәһәр асыуланып ҡабырғаһына төртөүенә уянып китте.* Ғ. Лоҡманов.

♦ **Зәһәр һыуы** *һөйл.* араҡы. *Ул [шахтёр] бергә эшләгән иптәштәренә ҡарай ҙа: «Ах! Земляк, где наше не пропадало»,— тип, янған йөрәгенә зәһәр һыуы һибергә тотона.* Ш. Шәһәр.

● *Зәһәр зәһәрҙе киҫә.* Мәҡәл.

**ЗӘҺӘРЛЕ** *с.* **1.** Ағыулы. *Зәһәрле төтөн еҫе.* ■ *Уңалған йөрәктәрҙең яраларын зәһәрле ҡара йылан тағы саҡты.* М. Ғафури. / *күсм.* Күңелде имгәткес, михнәтле, яфалы, әсе. *Зәһәрле ҡайғы.* ■ *Мин .. тормошомдоң бынан да насар, бынан да зәһәрле буласағын белмәйем.* С. Агиш.

**2.** Нәфрәтле, уҫал, асыулы. *Зәһәрле күҙ ҡарашы.* ■ *[Уның] күҙҙәре аҡайҙы, зәһәрле һүҙҙәр сәсергә, хурларға тотондо.* Н. Ҡәрип.

**ЗӘҺӘРЛЕК** *и.* Зәһәр (2—5 мәғ.) булыу сифаты. *Ҡыштың зәһәрлеге. Әҙәмдең уҫаллығына, зәһәрлегенә сик юҡ.* ■ *Диңгеҙ ниндәй матур, ниндәй зәһәр — зәһәрлегенә күндем.* Н. Нәжми. *Д. Юлтый шиғырында мулла-мәзиндәргә төбәп әйтеп, уға йәштәрҙең ышанмағанын сатирик зәһәрлек менән асып һалды.* Ғ. Хөсәйенов.

**ЗӘҺӘРЛӘНЕҮ** *ҡ.* Ҡаты асыуҙан, нәфрәттән ярһыу. *Сәлих зәһәрләнеп китте: «һеҙ ни өсөн йәбештегеҙ әле миңә? Миндә ни эшегеҙ бар?»* Х. Мохтар.

**ЗӘҺӘРЛӘҮ** *ҡ.* Кешенең тормошон, күңелен ағыулау. *Шакир ағайҙың ҡыҙы .. ауылда көн күрһәтмәгәс, ауыл кулактары һәр ваҡыт зәһәрләп торғас, үҙ белдеге менән Өфөгә киткән дә .. эшкә ингән.* Д. Юлтый. *Ҡатын-ҡыҙ — гөлдәр, вә ләкин бик сәнскеле зәһәрләләр, кәлепте сәнсәләр, зәһәре менән рухың зәһәрләйҙәр.* М. Ғафури.

# И

**И** [1] Башҡорт алфавитының ун икенсе хәрефе.

**И** [2], **и-и** *ымл.* **1.** Шатлыҡты, һоҡланыуҙы, кәнәғәтләнеүҙе, хуплауҙы белдерә. *[Ғәмилә:] И-и, Хәйернисаҡайым, һағынып бөттөм үҙеңде! Әйҙә, тиҙерәк өйгә инәйек.* Б. Бикбай. *И-и, Шәмси, һин, дә ҙур үҫкәнһең икән [тине Шәмсиә].* В. Исхаҡов. *[Вәли:] Бына минән һиңә бүләк. [Нурия:] И-и ... ҡалай матур йөҙөк!* И. Ниғмәтуллин. / Баланы һөйгәндә әйтелә, күңел нескә-

легән, ныҡ яратыуҙы белдерә. *И-и-ии, баламды гына!*

**2.** Ҡыҙғаныуҙы үкенеүҙе, ҡайғырыуҙы һ. б. белдерә.— *И, сабый, атаһын күмгәндә яңы ғына аяғына баҫа башлағайны шул.* Р. Низамов. *И, ҡыҫҡа ғына шул йәшлек ғүмере!* Ғ. Рамазанов.

**3.** Шелтәләүҙе, ризаһыҙлыҡ тойғоһон, әрләүҙе белдерә. *И, апай, кейәүеңдең холҡон беләһең бит. Беребеҙҙе лә тыңламай [тине Ғәззә].* Һ. Дәүләтшина. *[Мәғфиә:] И, ҡарт, ҡарт, бала һымаҡ өйгә индең дә баттың! Күрмәйһеңме ни, унда атың нимә эшләй.* Б. Бикбай.

**4.** *һөйл. ҡар.* **эй** 3. *[Асия:] .. Өфөнән бер кеше килгәйне,.. минең йырлағанымды ишеткәс, и Өфөгә саҡырҙы, и саҡырҙы.* Б. Бикбай. *Сыйырсығы .. ҡанат ҡағып, дәртләнеп, и һайрай рәхәтләнеп!* Ф. Рәхимғолова.

**ИБЕТ** *киҫ. ыҫҡ. ф. һөйл.* Эйе бит. *[Сабит:] Һалдат араһыҙ булмай ул, ибет.* В. Исхаҡов. *Бәхәс башлана: Хәс Салауат Юлаевтың аты һымаҡ, ибет!* Р. Солтангәрәев.

**ИБЛИС** [*ғәр.*] *и.* **1.** Дини хөрәфәт буйынса, кешене имандан, юлдан яҙҙыра торған мифик зат; шайтандар башлығы. *Нитәкки әҙәм ғәлиәссәләм иблис мәлғүндең ялған һүҙе илан дәрәжәһенән төштө?* М. Өмөтбаев.

**2.** *кусм.* Насар, алдаҡсы, мут кеше.— *Бәй-бәй,— ти Сәлимә еңгә быны ишеткәс,— был иблис әллә берәй мутлыҡ уйлаған инде.* Р. Ғабдрахманов. / Әрләгәндә әйтелә. *[Йәмилә — иренә:] Иблис, төн ауыштырып йөрөмәһәң!* Т. Килмөхәмәтов.

♦ **Иблис төкөргән [бәндә]** әрләгәндә әйтелә.— *Бар, йортомдан сығып кит, иблис төкөргән бәндә! Күҙемә күренәһе булма! — тип ҡысҡыра Ҡупай* (Әкиәттән).

**ИБН** [*ғәр.*] *и. ҡар.* **ибне.**

**ИБНЕ** [*ғәр.*] *и. иҫк. кит.* Берәүҙең улы; улан, ул. *Һәр нисек ғафил ятыу ярамаҫ тип, шиғыр яҙҙы Ғәбделмәжит ибне татар.* М. Ғафури. **Ибне инсан** әҙәм балаһы; кеше. *Гонаһ ҡылһа был көндә ибне инсан, сәбәп булды быға, тиҙәр, ул шайтан.* М. Ғафури.

**ИБНӘ** [*ғәр.*] *и. иҫк. кит.* Берәүҙең ҡыҙы, ҡыҙ.

**ИБРАЗ** [*ғәр.*] *и. иҫк. кит.* Күрһәтеш, асыш.

□ **Ибраз итеү** (*йәки* **ҡылыу, эйләү**) күрһәтеү.

**ИБТИДА** [*ғәр.*] *и. иҫк. кит.* Ниҙеңдер башланышы.

□ **Ибтида ҡылыу** башлау.

**ИБТИДАИ** [*ғәр.*] *с. иҫк. кит.* Башланғыс, элементар. *Тик еткән ваҡыттарҙа мин иртәнән киҫкә саҡлы шуларҙы уҡып, ибтидаи дәрәжәлә булһа ла, ер йөҙө менән танышып сыҡтым.* М. Ғафури. **ибтидаи синыф** революцияға ҡәҙәр башланғыс мәктәптәге синыф. *Мине лә Ғабдулла [Амантаев] менән бер класҡа, дүртенсе ибтидаиға, ҡуйҙылар.* С. Агиш. **Ибтидаи тәғлим** *ҡар.* **тәғлим.**

**ИБТИДАӘН** [*ғәр.*] *р. иҫк. кит.* Башлап ебәреү өсөн, башлап. *Барсабыҙҙы юҡтан бар ҡылып, йән биреп, ризыҡ биргән илаһ ҡәдим ибтидаән вә интиһаз аллаһ зөлйәләлдер.* М. Өмөтбаев.

**ИБӘЛӘК** *с. диал. ҡар.* **елбәҙәк** [1] 2.

**ИБӘС** [1] *и.* Сабата ҡалыбының үргәндә тубыҡ араһына ҡыҫтырып ултыра торған тотҡаһы.

**ИБӘС** [2] *и. диал. ҡар.* **ҡалдыҡ** 1.

**ИБӘСЛӘҮ** *ҡ. диал. ҡар.* **ҡоршау** [1] 1. *Тәҙрә быялаһын ибәсләү.*

**ИБӘТӘЙ** *и.* **1.** Төрлө эш, хәрәкәткә булған иплелек; ҡулайлыҡ. *Ауыҙының ибәтәйе юҡ. Ҡулының ибәтәйе юҡ, тотҡан бер нәмәһе төшә лә китә.*

**2.** Тотанаҡлылыҡ, тәртиплелек. *Һөйләгән һүҙенең бер ҙә ибәтәйе юҡ.*

**ИБӘТӘЙЛЕ** *с.* **1.** Төрлө эш, хәрәкәткә ипле; ҡулайлы, йәтешле. *Ҡулы ибәтәйле.*

**2.** Бөтә яҡтан килешле; йәтеш, ыҡсым. *Ибәтәйле кейем.*

**3.** Һөҙе, ҡылығы тотанаҡлы; тәртипле. *Ибәтәйле кеше. Ибәтәйле булыу.*

**ИБӘТӘЙҺЕҘ** *с.* **1.** Төрлө эшкә, хәрәкәткә ипһеҙ; ҡулайһыҙ. *Ҡулы ибәтәйһәҙ.* // *Садрый .. беренсе тапҡыр балта тотҡан кешеләй ибәтәйһеҙ тотона, һис бер сабам тигән еренә саба алмай.* Н. Мусин.

**2.** Йәтеш, йыйнаҡ түгел, уңайһыҙ; ипһеҙ. // *Һандыҡ ибәтәйһеҙ ултырған.* ■ *[Мотал:] Бынау өйрәк ояһын ибәтәйһәҙ урынға эшләп ятаһың икән.* М. Хәйҙәров. *Торналар ибәтәйһеҙ оҙон аяҡтарын һоноп ебәргән дә, үлек кеүек ята бирә, ти* (Әкиәттән).

**3.** Һүҙе, ҡылығы тотанаҡһыҙ; тәртипһеҙ. *Ибәтәйһеҙ әҙәм.*

**4.** *р. мәғ. диал.* Сиктән тыш, бик. *Ҡасандыр өйгә йән биргән, һуңғы ваҡытта ағартылмағанлыҡтан, ыҫҡа ҡарайған мейес ибәтәйһеҙ ҙур күренә..* Н. Мусин.

**ИГЕ** *с.* Билдәле бер кимәлдән сифаты юғары; яҡшы. *Бал ҡисәгегә ҡарағанда игерәк икән.* М. Тажи.

● *Өйрәнгән ҡатын өйрәнмәгән ирҙән игерәк.* Мәҡәл.

**ИГЕҘ** *с.* Бер инәнән бер юлы тыуған (кеше йәки хайуан балаларына ҡарата). *Игеҙ бала. Игеҙ быҙау. Игеҙ бәрәс.* // *Өс игеҙ.* ■ *Бер килһә килә бит ул, Мисбахтың һыйырҙары игеҙәр быҙау килтерҙе, һарыҡтары өстө-дүртте бәрәсләне.* Б. Бикбай.

● *Дуҫ — игеҙ, дошман — һигеҙ.* Мәҡәл. *Ир — игеҙ, имгәк — яңғыҙ.* Мәҡәл.

**ИГЕҘӘК** *и.* **1.** Игеҙ балалар. *[Һиҙиәттең] иң оло улы Ташбайға хәҙер алты йәш, ә игеҙәк Кәримә менән Вәлимәгә дүрт йәштәр.* К. Кинйәбулатова. / Игеҙ балаларҙың береһе, игеҙҙең һыңары. / *кусм.* Бер иш нәмәнең һыңары, ише. *Күҙгө эсендә йылмайып, уның [Ныязғолдоң] һүрәте — игеҙәге ултыра.* Һ. Дәүләтшина.

**2.** *с. мәғ. ҡар.* **игеҙ.** *Сабит менән Байыш бер туған — игеҙәк егеттәр.* Ә. Харисов. *Хөрмәт ҡарттың һыйыры игеҙәк быҙау быҙаулаған.* З. Хисмәтуллин.

**3.** (*баш хәреф менән*) *күпл. астр.* Зодиактың береһе (Буға һәм Ҡыҫала йондоҙлоҡтары уртаһында урынлашҡан).

**ИГЕЛЕК** *и. диал.* Изгелек. *Игелек итеү. Игелек күреү.*

**ИГЕЛЕКЛЕ** *с. диал.* Изгелекле. *Игелекле бала.*

**ИГЕЛЕКҺЕҘ** *с. диал.* Иҙгелекһеҙ. *Изгелекһеҙ әҙәм.*

**ИГЕЛЕҮ** *к. төш. кар.* **игеү**[1]. *Башҡортостанда каты һәм йомшаҡ бойҙай игелә.*

**ИГЕН** *и.* **1.** Үҫеп ултырған бөртөклө ашлыҡ. *Иген эше. Иген игеү. Иген тапатыу. Иген урыу. Иген һуғыу.* ■ *Яуһын эле, яуһын ҡарҙар, тупрактар дымға туйыр. Игендәр дуғалы атты күмерлек булып уңыр.* А. Игебаев. *Ағас башындағы бәҫ киләһе йылдағы игендәрҙең төшөмлө буласағын күрһәтә.* Ғ. Дәүләтшин.

**2.** Һуғылған бөртөклө ашлыҡ. *Иген таҙартыу. Иген елгәреү. Иген оҙатыу. // Иген бушатҡыс. Иген киптергес. Иген тейәгес. Иген таҙартҡыс.* ■ *Яландағы ырҙындан ике йөк иген килтерҙеләр. Солтанов яңы килэткә бушатырға кушкан.* Б. Бикбай.

♦ **Иген төбө** *диал.* ҡамыл. **Иген турғайы** *диал.* һабан турғайы (*кар.* **турғай**).

● *Игә белгән иген ашар.* Мәҡәл.

**ИГЕНЛЕ** *с.* Игенгә бай, игеие булған. *Игенле ил.* / Иген яҡшы уңған. *Игенле Хәйбулла, бакырлы, рудалы Баймаҡ беҙҙе каршы алды.* К. Мәргән.

**ИГЕНЛЕК** *и.* Иген сәселгән ер; баҫыу.

**ИГЕНЛӘТӘ** *р.* Иген көйө, иген менән. *Игенләтә биреү. Игенләтә түләү.* ■ *Машина тулгас, уны тағы үлсәнеләр һәм Фәйзрахман игенде өйөнә алып кайтып китте. Был уға игенләтә тейгән эш хакы.* Р. Солтангәрәев.

**ИГЕНСЕ** *и.* Иген үҫтереү эше менән шөғөлләнгән кеше; иген игеүсе. *Көлтәселәр, эшсән игенселәр кулда уйната һәнәк, көлтәләр.* Ғ. Мәсғүт.

**ИҒЕНСЕЛЕК** *и.* Иген игеү эше. *Игенселек культураһы. Игенселек ҡорамалдары. Игенселек совхозы. Игенселек техникаһы.*

**ИГЕ-СИГЕ** *и.*, **иге лә, сиге лә** Ниҙәндер сик-күләме, иҫәбе-һаны. *Ҡул сабыуҙың иге лә, сиге лә булманы.* С. Агиш. *Иге-сиге күренмәгән иркен дала.* Һ. Дәүләтшина.

**ИҒЕҮ**[1] *к.* Иген үҫтереү эше менән шөғөлләнеү. *Иген игеү.* ■ *Мин икмәһәм иген ҡырҙарымда кемдәр орлоҡ сәсеп, кем игер?* Д. Юлтый.

● *Сиңерткәнән ҡурҡкан иген икмәҫ.* Мәҡәл.

**ИҒЕҮ**[2] *к. диал. кар.* **әйеү**[1].

**ЙГРЕК** *и.* **1.** Латин алфавитында арттан икенсе хәреф.

**2.** *мат.* Шул хәреф менән күрһәтелгән билдәһез дәүмәл (у).

**ИГӘЛЕҮ** *к. төш. кар.* **игәү**[1]. *Игәлгән тимер.*

**ИГӘР** *и.* Эттең бүренән булған көсөгө. *Арлан бүре менән кәнтәй эттән тыуған, .. Малбайҙың һунар эте игәр бит ул.* Ғ. Ишбулатов.

**ИГӘТ** *и.* Атаһы тарафынан ҡыҙға бирелгән, килен артынан килгән мал. *Ҡалыҡ ҡатын Мөбәййәнәгә ир малынан бер төрлө лә игәт булмәй.* Ғ. Ибраһимов.

**ИГӘТЕҮ** *к. йөкм. кар.* **игәү**[1].

**ИГӘҮ**[1] *к.* **1.** Игәү менән ышҡыу. *Тимерҙе игәү.*

**2.** *күсм.* Кешене шелтәләп, өҙләкһеҙ әрләү; ыжыу.— *Балыкта — киң тәбиғәт ҡосағы, әйләнгән һайын игәп торған ҡатын юҡ.* Б. Бикбай.

**ИГӘҮ**[2] *и.* Нимәнелер ышҡып ҡырыу өсөн файҙаланыла торған ваҡ тешле ҡорос ҡорамал. *Ағас игәүе. Дүрткел игеү. Йомро игәү. Ҡырлы игәү. Ваҡ игәү. Эре игәү. Ялпаҡ игәү.* ■ *Ул [Айрас] кескәй генә игәү һыныгы менән тырышып-тырышып башаҡ үткерләй.* Ш. Насыров.

♦ **Ағас** (*йәки* **тешһеҙ, үтмәҫ) игәү** бер туктауһыҙ әрләп, шелтәләп ыжып, теңкәгә тейеп торған кешегә ҡарата әйтелә. *Нәсимә уға [Шакирға] ҡарамай бупылданы: йокланым шул.— Ай, үтмәҫ игәү! Шакир асыу менән өҫтәп ҡуйҙы.* Һ. Дәүләтшина. **Игәү ҡойроҡ** *диал. кар.* **комаҡ**[1].

**ИГӘҮЛӘҮ** *к. диал. кар.* **игәү**[1] 1.

**ИГӘШ** *и.* Әрләш, талаш.

● *Яҡшы һөйләгәндә кәңәш сығыр, яман һөйләгәндә игәш сығыр.* Мәҡәл.

**ИГӘШЕҮ** *к. урт. кар.* **игәү**[1].

**ИҒАНӘ** *и. кар.* **иғәнә.**

**ИҒДАДИ** [*ғәр.*] *с. иҫк. кит.* Алдан әҙерлек бирә торған класс, курс һ. б.//*Заһит Хәй Аургазинды баҫкыстың икенсе йортка боролған ерендә кыуып етте.. Был егет игдадиҙа укый ине.* С. Агиш.

**ИҒДАМ** [*ғәр.*] *и. иҫк. кит.* **1.** Берәй нәмәнең юҡҡа сығарылышы, юҡ ителеше.

**2.** Кешене үлтереү язаһы.

□ **Иғдам итеү** 1) юҡҡа сығарыу, юҡ итеү; 2) язалап үлтереү.

**ИҒЛАМ** [*ғәр.*] *и. иҫк. кит.* Берәй нәмә тураһындағы белешмә, аңлатма.

□ **Иғлам итеү** (*йәки* **ҡылыу**) белешмә биреү, белдереү. *Ғәлимдең Мусинды үлтереүҙә ғәйепләнеп судка бирелэсәген иглам кылдылар.* К. Туйкин.

**ИҒЛАН** [*ғәр.*] *и.* Берәй нәмә тураһында халыҡҡа еткереү өсөн газета-журнал һ. б. урынлаштырылған йәки стенаға элеп ҡуйылған хәбәр; белдереү. *Иглан биреү.* ■ *Башта ул [Ныязгол] иглан таратып кеше йыя торғайны. Һуңынан ул да мөмкин булмай башланы.* Һ. Дәүләтшина./ Шул хәбәр яҙылған, урынлаштырылған нәмә, яҙма; белдереү. *Иглан такта̂һы. Иглан куйыу. Иглан элеү.* ■ *Батша каланың бөтә еренә: «Иртәгә таң менән минең баксама беренсе булып һиҙҙермәй үтә алған кешегә ярты батшалығымды бирәм!» — тигән игландар каҙаклата* (Әкиәттән).

□ **Иғлан итеү** (*йәки* **ҡылыу**) берәй хәбәрҙе йәки ҡарарҙы халыҡҡа еткереү. *Батша атты килтерергә әмер бирҙе, ти, егетте ирекле тип иглан итте, ти* (Әкиәттән).

**ИҒТИБАР** [*ғәр.*] *и.* **1.** Күңелдең, уйҙың һәм ишетеү һәләтенең берәй нәмәгә йүнәләше. *Игтибарҙы тартыу. Игтибар менән тыңлау.* ■ *«Оскор күҙле, йәш, матур һалдат иң элек минең игтибарымды үҙенә тарта.* З. Биишева. *Ауылдағы бөтә хәбәрҙәр туктал̂ды, бөтә игтибар Гөлйөҙөмгә, уның тураһындағы хәбәрҙәргә кағылды.* Һ. Дәүләтшина.

**2.** Кешегә ҡарата булған хәстәрлек; илтифат.

□ **Иғтибар итеү** (*йәки* **биреү**) берәй нәмәгә күңелдә, уйҙы йүнәлдереү. *Алпамышаның кошо барлығын тегеләр белмәгән, күрәһәң, бер ҙә игтибар итмәгәндәр.* «Алпамыша». **Иғтибарға алыу** иғтибар менән кабул итеү; әһәмиәткә алыу. *Ул [Новиков] минең баяғы һүҙемде игтибарға алып, буғай, күңелдә табырға уйланы.* Д. Юлтый.

♦ **Иғтибар үҙәгендә [булыу, тороу]** төп иғтибарҙы алып тороу.

**ИҒТИБАРЛАП** *р.* Иғтибар менән. *Игтибарлап йөрөү. Игтибарлап карау.* ■ *[Шәрәфи] игтибарлабырак караһа .. бында йәшниктәрҙә тоҙланған балык һакланыуын белде.* И. Насыри. *Айбулат игтибарлап күҙ һалып, күперҙән сығарып .. ташланған кола атты күрҙе.* Һ. Дәүләтшина.

**ИҒТИБАРЛАУ** *к.* Иғтибарға алыу, иғтибар итеү. *Айбулаттың тауышына бирелгән характеристикаларҙы игтибарлайык.* М. Минһажетдинов.

**ИҒТИБАРЛЫ** *с.* **1.** Иғтибар менән караусы. *Игтибарлы булыу. Эшкә игтибарлы.* / Иғтибар менән һуғарылған. *Ологая төшкән бер укытыусы уга [Сәгиҙәгә] игтибарлы караш ташлап алды, ахырҙа уга якынырак килеп һүҙ кушты.* М. Тажи.

**2.** Кешегә карата хәстәрлекле; кайғыртыусан, ихтирамлы.

**3.** *иҫк.* Кешенең иғтибары менән файҙаланған; хөрмәтле. [Вәли] *мәхәлләнең игтибарлы кешеһе, мәсеттең мөтәүәллийе булгас, йома һәм гәйеттәргә сәллә киймәй барыуҙы килештермәй.* М. Ғафури.

**ИҒТИБАРЛЫЛЫК** *и.* Иғтибарлы булыу сифаты. *Игтибарлылык кәрәк. Игтибарлылыгы етешмәй. Игтибарлылыгы менән айырылып тороу.*

**ИҒТИБАРҺЫҘ** *с.* **1.** Иғтибары әҙ, **иғтибары** етешһеҙ. *Игтибарһыҙ кеше. Игтибарһыҙ караш.* ■ *Вася Айбулатка, танымаган шикелле, игтибарһыҙ гына күҙ төшөрҙө.* Һ. Дәүләтшина.

**2.** Кешегә карата хәстәрлекһеҙ; ихтирамһыҙ. *Игтибарһыҙ булыу.*

**ИҒТИБАРӘН** [*гәр.*] *р. иҫк. кит.* **1.** Иғтибар биреп, иғтибар менән. *Игтибарән тыңлау. Игтибарән яҙыу.*

**2.** *бәйл. функцияһында* Башлап. *Һарыбай хан .. донъянан үтте. Куҙыйкүрпәс шул көндән игтибарән үкһеҙ булып калды.* М. Буранғолов. *Бер башкорт, бер рус труппаһы төҙөлөп, был ике труппа .. беренсе ноябрҙән игтибарән кышкы сезонды башланы.* Д. Юлтый.

**ИҒТИДАЛ** [*гәр.*] *и. иҫк. кит.* Тиң хокуклык, тигеҙлек. *Атыр ул ысын таң, тыуыр игтидал. Йәшәһен фәкәт шанлы ихтилал!* С. Кудаш.

**ИҒТИКАД** [*гәр.*] *и. иҫк. кит.* Күңелдәге ышаныс. *Йыһанша хәҙрәт игтикадында мосолман батшалыктары араһынан Бохара кеүек кеүәтле батшалык юк.* З. Һаҙыев.

□ **Иғтикад итеү** (*йәки* **кылыу**) ышаныу. *Аксала, тип, барса кеүәт, кылган инде ул [хәсис зат] игтикад.* М. Ғафури.

**ИҒТИКАДИ** [*гәр.*] *с. иҫк. кит.* Ышанысы ныклы. *Ул [Фәхтхелкадир Сөләймән] ысын игтикади башкорт милләтсеһе һәм милләтсе шагир ине.* Д. Юлтый.

**ИҒТИРАЗ** [*гәр.*] *и. иҫк. кит.* Берәй эш, кылык йәки карарға карата каршы фекер; каршылык.

□ **Иғтираз итеү** (*йәки* **кылыу**) каршы төшөү, каршы сығыу. *Бындай шикәйәткә каршы куяндарҙан .. игтираз итеүсе булманы.* Б. Мирзанов.

**ИҒТИРАФ** [*гәр.*] *и. иҫк. кит.* Ниҙеңдер ысын икәнен дөрөҫләгән, ғәйепте йәки етешһеҙлекте бар тигән һүҙ.

□ **Иғтираф итеү** (*йәки* **кылыу**) бар тип белеү, ысын тип дөрөҫләү; таныу. *Петроград эшсән халкы һаман да Петроград өҫтөнә төшкән куркынысты тамам игтираф итә алмай әле.* Ғ. Ибраһим-Кыпсак. *Совет илендә гигант фабрика-заводтарҙың үҫеүен, .. фән һәм техниканың алга китеүен дошмандар ҙа игтираф итергә мәжбүр булды.* М. Ғафури.

**ИҒУА** [*гәр.*] *и. иҫк. кит.* Аҙғынлыкка, юлдан яҙҙырыуға алып барған котко. *Эсендәге ханаһының игуаһында, мал йыйып бик бай булыу дәгүәһендә* (Мөнәжәттән).

□ **Иғуа итеү** (*йәки* **кылыу**) аҙғынлыкка котортоу, юлдан яҙҙырыу.

**ИҒӘНӘ** [*гәр.*] *и.* Дөйөм берәр эш, кәрәк өсөн халыктан йыйылған ярҙам. *Игәнә биреү. Игәнә йыйыу.* ■ *Мәжлестә Байрамгол мәктәбе файҙаһына күп кенә игәнә йыйыла.* Ғ. Дәүләтшин. *Башкорт халкы борон-борондан игәнә йыйып ил төҙөгән, яу сапкан, каруан һарай һалган.* Й. Солтанов.

**ИҒӘНӘТ** *и. кар.* **иғәнә.**

**ИҒӘНӘТЛЕ** *с.* Ярҙамсыл, рәхимле, изгелекле. *Игәнәтле кеше.*

**ИҒӘНӘТҺЕҘ** *с.* Ярҙамсыл түгел, изгелекһеҙ. *Игәнәтһеҙ булыу.*

**ИДАРА** [*гәр.*] *и.* **1.** Хакимлек, етәкселек. *Дәүләт идараһы. Идараны якшыртыу.*

**2.** Эшкә етәкселек итеү үҙәге һәм шул етәкселектең эш урыны. *Идара йорто. Идара ултырышы.* ■ *[Сәгиҙә] кәңәш алыр өсөн Тайморзинды эҙләп колхоз идараһына килде.* М. Тажи.

□ **Идара итеү** 1) халыкка йәки эшкә етәкселек итеү. *Дәүләт менән идара итеү.* ■ *Хеҙмәтсәндәрҙең идара итеүҙә катнашыуы киңәйҙе, хеҙмәт коллективтары тураһында СССР законы кабул ителде һәм тормошка ашырыла.* „Совет Башкортостаны", 1985, 9 ноябрь; 2) төрлө машина, механизмды эшләтеү; йөрөтөү. *Карапты ергә төшөрөү өсөн кул менән идара итеү системаһын файҙаланыу.*

**ИДАРАЛЫК** *и.* Етәкселек итеү үҙәге һәм шул үҙәк урынлашкан йорт. *Төҙөлөш идаралыгы.* **Йорт идаралығы** *кар.* **йорт.**

**ИДДИҒА** [*гәр.*] *и. иҫк. кит.* Дәғүә.

□ **Иддиға итеү** (*йәки* **кылыу**) дәғүә итеү.

**ИДЕАЛ** [*рус.* ⟨*фр.*] *и.* **1.** Кешеләргә тормошта алға ынтылыу өсөн дәрт биреп, өмөт уятып торған иң юғары максат. *Беҙ ана шул якты көнгә, якты идеалга карап, йөҙөп барабыҙ нәк карап.* Т. Йәнәби. *Кай берәүҙәр уны [һөйөүҙе]*

*идеал итеп, һөйөү өсөн генә йәшәй.* Х. Ҡунаҡбай.

**2.** Берәй нәмәнең йә шәхестең иң камил күрелгән үрнәге. *Һин минең алыҫ өмөтөм, хыялым, сафлыктың һәм гүзәллектең идеалы.* Р. Назаров.

**ИДЕАЛИЗМ** [*рус.* 〈 *фр.*] *и.* Аңды, рухты, идеяны бөтә булған нәмәнең нигеҙе тип иҫәпләп, материализмға ҡапма-ҡаршы ҡуйған философик йүнәлеш. *Объектив идеализм. Субъектив идеализм.*

**ИДЕАЛИСТ** [*рус.*] и. **1.** Идеалистик философия яҡлы кеше.

**2.** Юғары идеалдарға бирелеп, шуның менән йәшәгән кеше.

**3.** *һөйл.* Ысынбарлыкты идеаллаштырырға яратҡан хыялый кеше.

**ИДЕАЛИСТИК** *с.* Идеализмға бәйле, идеализмға хас фекер менән һуғарылған. *Идеалистик ҡараш.*

**ИДЕАЛЛАШТЫРЫУ** *ҡ.* Берәй нәмәне, күренеште йәки кешене ысын булмышынан яҡшыраҡ итеп күҙ алдына килтереү йәки һүрәтләү. *[Аҡмулла Мәржәниҙе] мәғрифәтле тормоштоң байраҡсыһы итеп күрә, уға дан йырлай, уны мәдехләй, идеаллаштыра.* Ә. Харисов.

**ИДЕАЛЬ** [идеальный] *с.* **1.** *филос.* Хыялдағы, аңдағы. *Фекер беҙҙең башыбыҙҙа тышкы донъяны сағылдырған идеаль образ булып тора.*

**2.** Һәр йәһәттән яҡшы; идеалға (2 мәғ.) яуап бирерлек; һоҡландырғыс, тиңһеҙ. *Идеаль кеше.* ■ *Ул [Урал батыр] халыҡ ирке, тәбиғәттең үлемһеҙлеге өсөн йәнен ҡорбан иткән идеаль герой дәрәжәһенә күтәрелде.* М. Сәғитов.

**ИДЕОЛОГ** [*рус.*] *и.* Йәмғиәттә билдәле бер синыф йәки йүнәлештең идеологияһын яҡлап, шуның башында торған кеше. *Эшселәр синыфының идеологтары.*

**ИДЕОЛОГИК** *с.* Идеологияға бәйле, идеологияға мөнәсәбәтле. *Идеологик көрәш. Идеологик һәм политик көрәш. Идеологик тәрбиә. Идеологик эш.*

**ИДЕОЛОГИЯ** [*рус.* 〈 *гр.*] *и.* Берәй синыфтың йәки социаль төркөмдөң мәнфәғәтен кәүҙәләндергән философияла, политикала, сәнғәттә, хоҡуҡта, диндә сағылдырылған донъяға ҡараштар, фекерҙәр системаһы.

**ИДЕЯ** [*рус.* 〈 *гр.*] *и.* **1.** Маҡсатты аңлау, уны артабан төшөнөү һәм практик үҙгәртеп ҡороу перспективаларын эсенә алған ысынбарлыкты сағылдырыу формаһы. *Маркс-Энгельс-Ленин-дың бөтә тәғлимәте үҫеш идеяһы менән һуғарылған.* «Совет Башҡортостаны», 1968, 10 апрель.

**2.** Кешенең донъяға ҡарашында нигеҙ принцип булған төп фекер. *Демократик идея. Коммунизм идеяһы.* ■ *Беҙҙең идея һәм идеяларҙың тантанаһы өсөн көрәш-алыш хәҙер бөтә донъя күләмендә бара.* Ғ. Әмири.

**3.** Әҙәбиәт, сәнғәт әҫәрҙәренең эстәлегенә һалынған төп фекер. *Әҫәрҙең идея эстәлеге. Идея йөкмәткеһе тәрән.*

**4.** Уй, фекер, ниәт. *Идеяны хуплау.*

**ИДЕЯЛЫ** *с.* **1.** Ниндәй ҙә булһа бер идея, идеология менән һуғарылған. *Идеялы сәнғәт.*

**2.** Алдынғы идеялар менән һуғарылған, шул идеяларға ихлас бирелгән. *Башкорт әҙәбиәте — донъялағы иң алдынғы, иң идеялы совет әҙәбиәтенең айырылмаҫ бер өлөшө.* Ә. Харисов.

**ИДИЛЛИК** *с.* Идиллияға ҡоролған. *Идиллик тормош.*

**ИДИЛЛИЯ** [*рус.* 〈 *гр.*] *и.* **1.** *әҙ.* Тәбиғәт ҡосағындағы тыныс ауыл тормошон идеаллаштырып күрһәткән бәләкәй шиғри әҫәр.

**2.** *шаяр.* Шау-шыуһыҙ, вайымһыҙ, бәхетле тыныс тормош. *Ғаилә идиллияһы.* ■ *[Юламан:] Ах-ха! Яратам йәйге урман кистәрен! Романтика! Идиллия!* Ф. Иҫәнғолов.

**ИДИОМА** [*рус.* 〈 *гр.*] *и.* *лингв.* Билдәле бер телдең үҙенә генә хас булған тотороҡло тасуири һүҙ бәйләнеше (һүҙ бәйләнешен тәшкил иткән һүҙҙәрҙең мәғәнәһе ул һүҙҙәрҙең айырым ҡулланылғандағы мәғәнәләренә тура килмәй, мәҫ. *үҙәк өҙөлөү, колаҡ кағыу*)

**ИДИОМАТИК** *с.* Идиомаға ҡараған, идиома рәүешендәге. *Идиоматик һүҙ бәйләнеше.*

**ИҘГЕНЛЕК** *и.* Хоҡуҡһыҙланған, иҙелгән хәл. *Милли иҙгенлек. Синфи иҙгенлек. Иҙгенлеккә төшөү.*

**ИҘГЕС** *и.* *һөйл.* Нимәнелер иҙә торған ҡорамал. *Картуф иҙгес.*

**ИҘҘЕРЕҮ** *ҡ.* *йөм.* *ҡар.* **иҙеү** [1].

**ИҘЕЛ** *и.* Ағып яткан ҙур һыу; йылға. *Иҙел яры. Иҙел буйындағы ауылдар.*

**2.** (баш хәреф менән) Ир-ат исеме.

● *Иҙел кисмәй ил булмаҫ, курҡак егет ир булмаҫ.* Мәҡәл. *Иҙел күрмәй итек сисмә.* Мәҡәл. *Илен һөйгән — кисеүһеҙ иҙел кискән.* Әйтем.

**ИҘЕЛЕҮ** *ҡ.* *төш.* *ҡар.* **иҙеү** [1]. *Иҙелгән картуф.* ■ *Саҡайҙың катыны, тукмасым иҙелеп бөтә инде, тип, ҡыҙын ебәреп, ирен бер нисә тапҡыр саҡыртты.* Б. Бикбай. *Һәр бер ярлы, мазлум, иҙелгән ил мөхтәриәт алһын, терелһен!* Ш. Бабич.

**ИҘЕЛЕҮСЕ** *и.* Эксплуататорҙар синыфы тарафынан йәберләнгән кеше йәки халыҡ.

**ИҘЕЛМӘ** [1] *и.* Цемент, ҡом, эзбиз кеүек нәмәләрҙе һыуға иҙеп әҙерләгән төҙөлөш материалы. *Цемент иҙелмәһе. Иҙелмә әҙерләү.*

**ИҘЕЛМӘ** [2] *и.* **1.** Һыйыр малындағы тояҡ ауырыуы (малды аяҡтан йҙҙыра).

**2.** (*йәки* **тел иҙелмәһе**) *диал.* Бешмә.

**ИҘЕН** [*ғәр.*] *и.* *иҫк.* Рөхсәт, ризалыҡ. *Шул ваҡыт берәү килгән илай-һыҡтай, аяғына баҫа алмай ҡолай-ҡолай. Һөйләргә Мәсем хандан иҙен һорап, башлаған һүҙ һөйләргә инде былай.* «Бабсаҡ менән Күсәк».

□ **Иҙен итеү** рөхсәт биреү.

**ИҘЕҮ** [1] *ҡ.* **1.** Ҡаты йәки порошок һымаҡ нәмәне шыйыҡлыҡ ҡушып болғатыу. *Балсыҡ иҙеү. Икмәк иҙеү. Ҡамыр иҙеү.* ■ *Аш артынан ҡорот иҙеп ҡатылған, ҡара борос һалынған һурпа бирелде.* Б. Бикбай.— *Он иҙәйем әле, иртәрәк торормон да ҡоймаҡ ҡойормон,— тине эсәйем.* Ж. Кейекбаев.

**2.** Һыуға һалып иретеү. *Тоҙҙо иҙеү. Шәкәрҙе иҙеү.*

**3.** Ҡаты нәмәне төйгөләп, баҫҡылап ваҡлау; онтаҡлау. *Батырҙарым бар минең .. типһә —*

*тимер өҙөрҙәй, һукһа — ташты иҙерҙәй.* Р. Ниғмәти.

**4.** Йомшаҡ, һыулы, һутлы нәмәне һытыу. *Еләкте иҙеү. Картуфты иҙеү.*/ Һуғып йәмшәйтеү. *Әхмәҙиҙең ҡулындағы сүкеш .. тимерҙе иҙә, йәйә, һуҙа, һындырып өҙөп ташлай.* Ш. Шәһәр./ Тапап борһалау, болартыу. *Мендәрҙе иҙеү. Урынды иҙеү.*

**5.** *күсм.* Нык итеп туҡмап, хәлдән тайҙырыу. *Морат ни эшләһен инде, һуғышырға хәлдән килмәй, күмәк малайҙарҙың иҙеп ташлауы бар.* И. Ниғмәтуллин. **Иҙмәһән** (*йәки* **иҙмәләй**) **иҙеү** бик ҡаты итеп туҡмау. *[Вася:] Ҡара уны, ошаҡлаһаң, урамға сыҡма, иҙмәңде иҙермен.* Х. Мохтар.

**6.** *күсм.* Ҡыйратыу, юҡ итеү, бөтөрөү. *Пролетариат был ҙур һуғышта Дутовты, контрреволюцион армияны мәңге баш күтәрә алмаҫлыҡ итеп иҙә.* З. Шәрҡи.

**7.** *күсм.* Ыҙалатыу, ҡаҡшатыу. *[Хәлимә:] Әйтмә инде, Йыһан абыстай, ишек алды эше мине ҡаты иҙҙе.* Ш. Шәһәр.

**8.** *күсм.* Хосуси милек шарттарында кешене ныҡ хоҡуҡһыҙға әйләндереп, ҡаты ҡыҫыу; ирекһеҙ хәлдә эшләтеү. *Эшсене күп иҙҙеләр, улар һаман түҙҙеләр.* Ш. Бабич. *Шулай беҙҙең Совет һалдаттары азат итә ауыл, ҡаланы. Иҙеү өсөн түгел, коткарыусы булып килә ул был донъяны.* З. Биишева.

◆ **Һыуға таш иҙеп әсер сиккә етеү** асығыуҙың һуңғы сигенә килеү.

**ИҘЕҮ** [2] *и.* **1.** Күлдәктең түштән асыла торған итеп, әҙеплләп теккән өлөшө. *Сигеүле иҙеү.* ■ *Сыңлай салғы сыңдары .. Йәш егеттәр иҙеү сисеп, ярһып бесән сабалар.* М. Кәрим. *Беҙ матур Урал буйҙарында, Яйыҡ ярҙарында, Агиҙел туғайҙарында, иҙеүҙәрен сисеп ебәреп, иркен йәшәргә өйрәнгән хөр башҡорт балаһыбыҙ.* И. Насыри. **Иҙеү бауы** *диал.* үңербау. **Иҙеү ҡапламаһы** (*йәки* **ҡапҡасы**) күлдәк иҙеүенең өҫкө ҡаты.

**2.** *этн.* Ҡатын-ҡыҙҙарҙың түшен биҙәү өсөн тәңкә баҫып, уҡа һалып теккән биҙәү нәмәһе; алмиҙеү. *Уҡа иҙеү. Иҙеү тәңкәһе. Иҙеү һалыу.* ■ *Ғәйникамал киң күлдәк кейгән, .. әйәге аҫтында — иҙеү. Ул Салауат күпере кеүек [итеп] төрлө төҫтәге ситсанан дуғаландырып яһалған ине.* Ғ. Хәйри.

**ИҘЕҮ** [3] *и. диал.* Ауыҙҙың ике яҡ сите.

**ИҘЕҮ** [4] *и. кар.* **иҙгенлек.**

**ИҘЕҮ** [5]: **иҙеү ат** еккегә йөрөмәгән ат.

**ИҘЕҮЛЕ** *с.* Иҙеү [2] ҡуйып тегелгән. *Иҙеүле күлдәк.*

**ИҘЕҮЛӘҮ** [1] *к.* Иҙеү [2] ҡуйыу. *Күлдәкте иҙеүләп тегеү.*

**ИҘЕҮЛӘҮ** [2] *к. диал.* Атты теҙгененән йәки дилбегәһенән тарткылап ҡыуыу.

**ИҘЕҮСЕ** *и.* Кеше хеҙмәтен үҙләштергән хосуси милек эйәһе; эксплуататор.

**ИҘЕҮСӘ** *и. диал.* Алмиҙеү.

**ИҘЕШЕҮ** *к. урт. ярҙ. кар.* **иҙеү** [1] 1—5.

**ИҘМӘ** *и. кар.* **иҙелмә** [1].

**ИҘРАТЫУ** *к.* Ныҡ итеп иҙеү; һытҡылау. *Еләкте иҙратып бөткәндәр.*

**ИҘРАУ** *к.* **1.** Ныҡ итеп иҙелеү; һытылыу. *Еләк ныҡ бешкән, иҙрап тора.* ■ *[Айыу] ерҙә түмәр кеүек тәгәрләп йөрөй икән. .. Бахыр бал корттарының күбеһе иҙрап бөткән.* Ж. Кейекбаев.

**2.** *диал. кар.* **иҙрәү** 1.

**ИҘРӘЙЕҮ** [1] *к.* Асыуланып һүҙ әйтеү; екереү, әзрәйеү. *Ул [Вәлишә] иҙрәйеп ниҙер ҡысҡырып әйтте.* Һ. Дәүләтшина.

**ИҘРӘЙЕҮ** [2] *к. диал. кар.* **ирәйеү** 2. *[Уларҙы] ҡунаҡҡа .. саҡырҙылар. Сабира иҙрәйеп ире менән түр башында ултырҙы.* Р. Низамов.

**ИҘРӘТЕҮ** *к.* **1.** Тишелер сиккә еткереп йоҡартыу (кейемде). *Өҫтәүенә ете малайҙың осло терһәк-түбыгы иҙрәткән күлдәк-ыштанды яма, ҡыш булһа — быйма төплә, ойоҡ-бейәләй бәйлә.* Ш. Янбаев.

**2.** Тәнде йомшартып, ләззәтләндереү, рәхәтләккә талдырыу. *Баш аҫтындағы сәскәле бесәндең иҫерткес хуш еҫе беҙҙе иҙрәтеп алып китте.* А. Ғирфанов.

**3.** *эйһ. ф. кар.* **иҙрәү** 2. *Тонсоу булғанға иҙрәтеп тора.*

**ИҘРӘҮ** *к.* **1.** Йоҡарып, епкә ҡалып, тишелер хәлгә етеү. *Бер ҡат киндер күлдәк-ыштаным бар, ул да иҙрәп бөткән.* Ғ. Ғүмәр.

**2.** Тәндәр иреп, ләззәтләнеп, рәхәтләккә бирелеү. *Иҙрәп йоҡлау.* ■ *Комиссар скрипкаһын алып, «Буранбай» көйөн уйнарға тотондо. Мәжлестәгеләр иҙрәп, рәхәтләнеп китте.* И. Насыри./Тән ойоп йоҡоға бирелеү. *Кейекбай барып тоҙҙо төн буйы һаклап ятты ла, таң алдынан иҙрәп китте* (Әкиәттән).

**3.** *диал.* Иҙрау. *Иҙрәп бешкән картуф.*

**ИҘҺАР** [*ғәр.*] *и. иҫк.* Берәй нәмәнең майҙанға сығарылышы, һиҙҙерелеше, күрһәтелеше. *Береһе шатлыҡ итә иҙһар, икенсеһе ғәмен һөйләй.* С. Яҡшығолов.

□ **Иҙһар итеү** (*йәки* **ҡылыу**) күрһәтеү, асып биреү. *Татищев бының [Әбелхәйер хандың] ниндәй уй менән килгәнлеген белде. Шулай за һис дошманлыҡ иҙһар ҡылманы.* М. Һаҙыев.

**ИҘӘН** *и.* Төрлө ҡоролманың баҫып йөрөү өсөн йәйелгән түшәмәһе. *Таш иҙән. Иҙән аҫты. Иҙән таҡтаһы. Иҙән өрлөгө. Ҡарағас иҙән. Иҙән йыуыу. Иҙән йәйеү (түшәү). Иҙән һепереү.* **Ер иҙән** ҡоролмала бер нәмә түшәлмәгән ер.

◆ **Тел менән иҙән ялау** бик ныҡ ялағайланыу, ярамһаҡланыу. *[Ҡолтүбә] Буләр хандың алдына килеп, маңлайы менән ер һепереп, теле менән иҙән ялап, һүҙ башланы, ти.* «Алпамыша». **Һеҙ тигәндә беҙ иҙәндә** кешегә мәрәкәләп түбәнселек белдергәндә әйтелә.

● *Бейей белмәгән иҙән һындырған.* Мәҡәл.

**ИҘӘҮ: ҡул иҙәү** *диал.* ҡул болғау.— *Әклимә-ә! — тип, ҡул иҙәп ҡабатланы ул [егет].* Ф. Иҫәнғолов. *Етә башлағас, Таһир Кусимов беҙгә табан боролоп, Баев яғына ҡул иҙәне.* С. Әлибаев.

**ИЁНА** [*рус.*] *и.* Японияның аҡса берәмеге.

**ИЕРО́ГЛИФ** [*рус.* ‹ *гр.*] *и.* Ҡытай, япон, корея һымаҡ халыҡтар яҙмаһында һүҙҙең тулы мәғәнәһен йәки берәй ижекте, өндө белдерә торған билдә. *Иероглиф менән яҙыу.*

**ИЕРОГЛИФИК** *с.* Иероглифка мөнәсәбәтле. *Иероглифик яҙма.*

**ИЖАБИ** [*ғәр.*] *с. иҫк. кит.* Ыңғай. *Хәбибә еңгәгә [Әлимәне һоратып] Мырҙаш тарафынан бер нисә тапкыр яусы ла килде. .. Ләкин Хәбибә еңгә уларҙың береһенә лә ижаби яуап бирмәне.* Д. Юлтый.

**ИЖАД** [*ғәр.*] *и.* Фән һәм культура байлыктарын тыуҙырыу өлкәһендәге эшмәкәрлек. *Ижад кешеһе.* ■ *Ерҙә тормош калыр, ижад калыр. .. Йыр яңғырар хеҙмәт туйында.* Ә. Вәли. / Шул эшмәкәрлектең һөҙөмтәһе. *Рәшит Нигмәти ижады.* ■ *Башкорт сәнғәтенең ҙур художнигы Арслан Мөбәрәков үҙ ижадының сәскә атыу осорон кисерә.* Ғ. Әхмәтшин.

▭ **Ижад итеү** ижади эш менән материаль һәм рухи байлыктар барлыкка килтереү.

♦ **Халык ижады** халыктың билдәле булмаған ижадсылары тарафынан барлыкка килтерелеп, быуындан-быуынға күсеп килгән культура комарткылары.

**ИЖАДИ** *с.* Ижад эше менән бәйле. *Ижади эш. Ижади процесс. Ижади эҙләнеүҙәр. Ижади хеҙмәт.* / Ижад нигеҙендә барлыкка килтереүгә, ижад итеүгә йүнәлдерелгән. *Ижади дуҫлык. Ижади командировка.*

**ИЖАДИАТ** *и. кар.* **ижад.**

**ИЖАДСЫ** *и.* Ижад итеүсе. *[Халык ижадын] дөрөҫ файҙалана алырлык белемле яңы ижадсылар кәрәк.* Т. Йәнәби.

**ИЖАЗӘТ** [*ғәр.*] *и. иҫк. кит.* Рөхсәт. *Ижазәт алыу. Ижазәт биреү.* ■ *[Рәхимйән:] Мин .. Троицкиҙа ике йыл укып, хәҙрәттән ижазәт алдым да, бына уның ук димләүе менән бында килдем.* Ғ. Ғүмәр.

**ИЖАП** [*ғәр.*] *и. иҫк. этн.* Ризалык.

♦ **Ижап укытыу** (*йәки* **иттереү, кылыу**) никахка тиклем кыҙ менән егеттең аталарынан алдым-бирҙем тигән ризалык алып, доға укытыу. **Ижап һыуы** ижап укығас, өшкөрә торған һыу. *Мулла .. кейәү менән кыҙға ижап һыуы һипте.* Я. Хамматов. **Ижап укыу** (*йәки* **кылыу**) кыҙ һәм егеттең ризалығын алғас, йәрәшеүҙе беркетеп махсус доға укыу. *Мулла ижап доға кылайык тип, «кыҙың Мәстүрәне Абдулла улы Хәмиткә хәләл ефетлеккә бирҙеңме?» тип өс мәртәбә һорай. Мулла йәнә кейәү атаһына әйләнеп: «Шафиктың кыҙы Мәстүрәне улың Хәмиткә хәләл ефетлеккә кабул итеп алдыңмы?» — тип өс мәртәбә әйткәс, .. мәжлестә булған халык «Хәйерле булһын!» — тип доға кылалар* (Туй йолаһынан).

**ИЖАП-КАБУЛ** *и* Никахка тиклем үк кыҙ менән егетте кушыр өсөн аталарынан алдым-бирҙем тигән ризалык алып укыған доға. *Ижап-кабул яһатыу.* ■ *[Котлояр — Айбулатка:] .. инәлеп йөрөмә!.. Кыҙҙы алып кас та кит. .. Шунда берәр мулла һымак кеше тап та ижап-кабул яһат.* Һ.Дәүләтшина.

**ИЖАРӘ** [*ғәр.*] *и. иҫк.* Вакытлыса файҙаланыу өсөн хак түләп алып тороу тәртибе; аренда. *Хөкүмәт ... уларға [Башкортостанға касып килгән кешеләргә] башкорт ерҙәрен ижарәгә алып ултыртыуға рөхсәт итә ине.* Ғ. Фәхретдинов.

**ИЖАУ** *и.* **1.** Кымыҙ, буҙа һоҫоу өсөн кулланыла торған семәрле ағас сүмес. *Кулсалы ижау. Ижау яһау.* ■ *Ғариф ҙур бер тәгәскә һабы селтәрле ижау менән бал [койҙо].* Ж. Кейекбаев.

**2.** *диал.* Сүмес. *Һылыу биҙрәләрен ергә ултыртып, бер ижау һыуҙы миңә һондо.* И. Ғиззәтуллин.

**ИЖБАР** [*ғәр.*] *и. иҫк. кит.* Көслөк, талап. *Замандың ижбары менән халкыбыҙ тәртип менән укыуҙы теләй башланы.* М. Ғафури.

□ **Ижбар итеү** мәжбүр итеү, көсләп эшләтеү.

**ИЖЕК** *и.* Һүҙҙең бүленмәй, бер тын менән әйтелә торған быуыны. *Баҫымлы ижек. Баҫымһыҙ ижек. Бер ижекле һүҙ. Күп ижекле һүҙ.* ■ *— Эй-йе,— тине Дауытов, һүҙҙең һәр бер ижеген һуҙып.* Б. Бикбай. **Асык ижек** һуҙынкы өнгә бөткән ижек (*мәҫ.* **ба-ла**). **Ябык ижек** тартынкы өнгә бөткән ижек (*мәҫ.,* **ат-тар, ком--ған**).

**ИЖЕКЛӘҮ** *к.* Ижектәргә бүлеү, һәр ижекте айырыу. *Ижекләп укыу.*

**ИЖРА** [*ғәр.*] *и. иҫк. кит.* Карар, хөкөм, талап һ. б. нәмәнең үтәлеше, башкарылышы.

□ **Ижра итеү** үтәү, башкарыу. *[Хәҙрәт:] Йәмәғәт, .. иртәгә шаһиттарҙан берәм-берәм яуап алырбыҙ, шәриғәт хөкөмен ижра итеү юлында ижтиһад кылырбыҙ.* М. Ғафури.

**ИЖТИМАҒИ** [*ғәр.*] *с.* Йәмғиәткә (1 *мәғ.*) караған, йәмғиәткә бәйләнешле. *Йәмғиәттең ижтимағи үҫеш закондары. Ижтимағи королош.* / Кешеләрҙең материаль һәм рухи эшмәкәрлектәре процесында уларҙың йәмғиәттәге урынын, йәмғиәттәге бәйләнеш мөнәсәбәттәрен сағылдырған һәм шуға бәйле булған. *Ижтимағи аң. Ижтимағи тормош.* / Бөтә кешелек, йәмғиәт катнашлығында үтәлә, эшләнә торған; дөйөм. *Ижтимағи етештереү корамалдары.* ■ *Социализм осоронда ижтимағи етештереүҙең иң юғары максаты — кешеләрҙең үҫә барыусы материаль һәм рухи ихтыяждарын мөмкин тиклем тулырак кәнәғәтләндереү.* Башкорт АССР-ының Конституцияһы, 1984.

♦ **Ижтимағи фәндәр** тарих, философия, филология һ. б. фәндәрҙе эсенә алған кеше йәмғиәтен һәм уның культураһын өйрәнә торған ғилем.

**ИЖТИМАҒИЛАШТЫРЫУ** *к.* Йәмғиәт карамағына күсереү, дөйөм халык милкенә әйләндереү; дөйөмләштереү.

**ИЖТИМАҒИЛАШЫУ** *к.* Йәмғиәт карамағына күсеү, дөйөм халык милкенә әйләнеү; дөйөмләшеү.

**ИЖТИМАҒИ-ПОЛИТИК** *с.* Ижтимағи һәм политик. *Ижтимағи-политик королош.*

**ИЖТИҺАД** [*ғәр.*] *и. иҫк.* Тырышлык. *Мулланың ижтиһады аркаһында Мәгәфүрҙе ауырыу тип калдыралар.* А. Таһиров.

□ **Ижтиһад итеү** (*йәки* **кылыу**) тырышлык итеү, тырышыу.

● *Ижтиһад иткән мораҙына еткән.* Мәкәл.

**ИЖТИҺАДЛЫ** *с. иҫк.* Тырыш. *Беҙ дәрескә тырышкан ижтиһадлы шәкерттәрҙе яратабыҙ.* М. Ғафури.

**ИЗАФЕТ** [*гәр.*] *и. лингв.* Эйәлек мөнәсәбәтендәге ике исемдән торған һүҙ бәйләнешен күрһәткән грамматик категория (мәç. ат башы, китаптың тышы).

**ИЗАХ** [*гәр.*] *и. иçк. кит.* Аңлатма, асыҡлама. *Тел төбөндә бер һүҙем бар .. бер йозаф һүҙ булһа ла гәр бер изахһыҙ үтмәйек.* Ш. Бабич.

□ **Изах итеү** аңлатыу, төшөндөрөү.

**ИЗАХАТ** *и. ҡар.* **изах.** *Изахат биреү.* ■ *Хәҙрәт йылмайып ҡарап ултыра ла, уларҙың һүҙе бөткән кеүек булгас, үҙе һүҙ башлап, тәкрир һәм изахат биреп алып китә ине.* М. Ғафури.

**ИЗВО́ЗЧИК** [*рус.*] *и. иçк.* Ялланған экипаждың, ылауҙың, көймәле арбаның йәки сананың күсере. **Ауыр извозчик** ат менән йөк ташыусы күсер. **Еңел извозчик** ат менән кеше йөрөтөүсе күсер.

**ИЗГЕ** *с.* **1.** Йөрәк түрендә һаҡлана торған, иң ҡәҙерле, бөйөк; мөҡәддәс. *Изге ватан. Изге бурыс. Изге маҡсат. Изге теләк. Ватанды һаҡлау — һәр кемдең изге бурысы.* / Мөһим, әһәмиәте ҙур булыу арҡаһында ҡул һуҙырға, тейергә ярамаған, ҡағылғыһыҙ, мөҡәддәс. *Изге комартҡы. Йәмғиәт милке изге. Изге һанау.* ■ *Ирек яулап үлгән иркәйҙәрҙең шунда [Уралда] ята изге һөйәге* (Халыҡ йырынан)./Күңел түрендә һаҡланған, ҡәҙерле, ғәзиз. *Изге ер.* / Азатлыҡ, үҙ илен һаҡлау өсөн алып барылған (һуғыш, көрәш тураһында); ғәҙел. *Изге көрөш.* ■ *Зыя ... ошо матур тормош өсөн көрәшкән, ошо изге юлда һәләк булған бер атаның балаһы...* М. Тажи.

**2.** Башҡаларға һәр ваҡыт яҡшылыҡ ҡыла торған, һәйбәт күңелле. *Изге кеше. Изге күңелле.*/ Ғәйебе, гөнаһы булмаған, керһеҙ, саф. *Изге бала. Изге йән. Изге мөхәббәт.*

**3.** Күңелгә ярашлы, яҡшы, һәйбәт. *Изге хәбәр. Изге эш.* ■ *Сейәбикә .. кемгәлер ярҙам һорап ҡул һуҙа, кемдәндер изге хәбәр көтә. Ләкин бер кем юҡ.* Т. Хәйбуллин.

**4.** *дини* Дингә бөтә күңеле менән бирелеп хеҙмәт иткән, дин рухы менән йәшәгән, гөнаһһыҙ, саф. *Изге бәндә.*//*Хәйер-саҙаҡа биреп, изгеләрҙең хәйер-доғаларын, фатихаларын алырға тырышыу кәрәк.* Ғ. Ғүмәр.

◆ **Изге ай** ислам дине буйынса, рамаҙан һәм мәүлит айҙары. **Изге сәғәттә** берәй эш алдынан уңыш теләп әйтелгән һүҙ.

● *Изге эштең иртәгеһе яҡшы.* Мәҡәл.

**ИЗГЕЛЕК** *и.* Кеше өсөн саф күңелдән эшләнгән яҡшы эш; яҡшылыҡ. *Изгелек итеү. Изгелек күреү. Изгелек ҡылыу. Изгелек эшләү.* ■ *Халыҡ .. теләгәнсә һыу ала, ти .. Аҡъял батырҙы .. ҡулда ғына йөрөтәләр, ти. «Был изгелегең өсөн нимә һораһаң, шуны бирәбеҙ»,— тип торалар, ти* (Әкиәттән).

◆ **Ике донъяла изгелек күрмәгер** ҡарғағанда әйтелә. *[Үмәр:] Ҡара яҡты бит суҡа бала, ике донъяла изгелек күрмәгер.* Һ. Дәүләтшина. **Изгелек ҡайтарыу** яҡшылыҡҡа ҡаршы яҡшылыҡ эшләү.

● *Изгелек ерҙә ҡалмаç.* Мәҡәл. *Изгелектең иртәһе, кисе юҡ.* Мәҡәл. *Ит изгелек — көт яуызлыҡ.* Мәҡәл. *Ҡояш янында — йылылыҡ, әсә янында — изгелек.* Мәҡәл.

**ИЗГЕЛЕКЛЕ** *с.* Кешегә яҡшылыҡ күрһәтеүсән. *Изгелекле кеше.* ■ *Бына хәҙер Урал батыр хәл өçтөндә ята. Уның янына, изгелекле батырыбыҙҙан айырылабыҙ инде, тип ҡайғырышып, бөтә тирә-яҡ халҡы йыйылған.* «Урал батыр».

**ИЗГЕЛЕКҺЕҘ** *с.* Кешенең изгелегенә, яҡшы эшенә яҡшы эш менән яуап бирә белмәгән, кешегә изгелек итмәгән. *Изгелекһеҙ кеше.*

**ИЗДА́ТЕЛЬ** [*рус.*] *и.* Яҙма хеҙмәттәрҙе матбуғатта баçтырып сығарыусы кеше йәки ойошма.

**ИЗДЕ́ЛИЕ** [*рус.*] *и.* Эшләп, яһап сығарылған нәмә. *Кулинар изделиелар магазины. Тимерле бетон изделиелар.* ■ *Брак изделиелар, түбән сифатлы тауарҙарҙы эшләп сығарыуҙы булдырмаçлыҡ саралар кәрәк.* «Совет Башҡортостаны», 1986, 26 февраль.

**ИЗЕЛ** *и. иçк.* Төп мәғәнә, асыл.— *Һеҙҙең үпкәләшеүҙең изеле ни һуң?* Һ. Дәүләтшина.

**ИЗОЛЯ́ТОР** [*рус.*] *и.* **1.** Йоғошло ауырыу менән ауырыған кешене, малды бүтәндәренән айырып тота торған урын. *Ауылда изолятор эшләнә һәм малдар шунда ҡуйып дауалана.* «Совет Башҡортостаны», 1966, 31 август.

**2.** *физ.* Электр тогын үткәрмәй торған матдә.

**3.** Электр сымын бүтән нәмәләргә тейеп тормаһын өсөн айырып беркетеп ҡуя торған нәмә. *Юғары вольт изоляторы.*

**ИЗОЛЯ́ЦИЯ** [*рус.*] *и.* **1.** *тех.* Техник маҡсатта энергия сығанағының, токты, йылылыҡты әҙ үткәрә торған махсус материал менән ҡапланышы. *Изоляция эштәре.*

**2.** Электр сымын һәм башҡа энергия үткәргестәрен изоляциялаған нәмә. *Изоляция таçмаһы. Изоляция ҡуйыу.* ■ *Юлбай .. изоляция таçмаһы.., ҡыпсыуыр алып килде ләең һыҙғанып эшкә тотондо.* Н. Мусин.

**3.** Тирә-йүн, йәмғиәт һ. б. менән булған бәйләнештән айырылыу, бүленеү. *Политик изоляциянан сығыу. Политик изоляция кисәйеү.*

**ИЗОЛЯЦИЯЛАНЫУ** *ҡ. төш. ҡар.* **изоляциялау.**

**ИЗОЛЯЦИЯЛАТЫУ** *ҡ. йөкм. ҡар.* **изоляциялау.**

**ИЗОЛЯЦИЯЛАУ** *ҡ.* **1.** Изоляция (1 мәғ.) ҡороу, эшләү. *Изоляция участкаһы. Изоляция эше.*

**2.** Изоляция (2 мәғ.) материалы менән ҡаплау, урау. *Үткәргесте изоляциялау.*

**3.** Тирә-йүн һ. б. менән бәйләнеште бөтөрөп, айырып ҡуйыу, айырып тотоу. *Ауырыуҙы изоляциялау. Тауышты ныҡ изоляциялау өсөн студияның стеналары айырым нигеҙҙәргә һалынған.* / Ситләтеү, айырып ҡарау. *Мораль-политик яҡтан изоляциялау.*

**ИЗОЛЯЦИЯЛАУСЫ** *и.* Изоляция эше менән шөғөлләнеүсе, изоляция яһаусы эшсе.

**ИЗОПРЕ́Н** [*рус.* ⟨ *гр.*] *и.* Ысын каучукты ҡоролай ҡыуғанда йәки скипидар парын ҡыҙған тимер торба аша үткәргәндә барлыҡҡа килә торған шыйыҡса (яһалма каучук эшләү өсөн файҙаланыла).

**ИЗОТЕ́РМА** [*рус.* ⟨ *гр.*] *и.* **1.** *геогр.* Географик картала билдәле ваҡытта уртаса берҙәй темпера-

тура булған урындарҙы тоташтыра торған һыҙыҡ.

**2.** *физ.* Йылылыҡ процесы диаграммаһында бер үк температураны күрһәткән нөктәләрҙе тоташтырған һыҙыҡ.

**ИЗОТО́П** [*рус.* 〈 *гр.*] *и.* Бер үк химик элементтың атомдары араһында үҙенең ауырлығы менән айырылып торған атом. *Уран изотобы. Изотоп энергияһы. Тәбиғәттә кислородтың өс төрлө изотобы табылды.*

**ИЗТИРАБ** [*ғәр.*] *и. иҫк. кит.* Аптыраған, йөҙәгән ауыр хис. *Әсир йән, изтираблә тулды выждан.* Ғ. Иҫәнбирҙин.

**ИЗТИРАРЛЫҠ** [*ғәр.*] *и. иҫк. кит.* Сараһыҙлыҡ.

**ИЗҺАР** *и. ҡар.* **иҙһар.**

**ИКЕ** *төп һ.* **1.** 2 һаны. *Ике икең дүрт.* / Кем йәки нәмәнеңдер 2-гә тиң иҫәбе. *Ике көн. Ике ҡат. Ике һум.* ■ *Ерәнсәй ҙә аҫҡайым елмәйҙер, кешегә ғүмер ике килмәйҙер* (Халыҡ йырынан).

**2.** Парлы нәмәләрҙең исеменә ҡушылып, күплек формаһының мәғәнәһен бирә.

**3.** *и. мәғ.* Биш баллы баһа системаһындағы «насар» билдәһе. *Ике алыу. Икегә уҡыу. Ике ҡуйыу.*

♦ **Башы ике түгел** *йәки* **башы икеме ни** *ҡар.* **баш. Ике аҙым** бик яҡын. **Ике аяҡтың береһен атламау** (*йәки* **баҫмау**) *ҡар.* **аяҡ** [1]. *Ҡыҙыңдың ике аяғының береһен кешегә атлатма.* Һ. Дәүләтшина. **Ике арала йөрөү** ике кеше араһында буталыу. **Ике донъя — бер мөрйә** *ҡар.* **донъя. Ике донъяла изгелек күрмәгер** ҡарғағанда әйтелә. **Ике илле** йөҙгә тигеҙ. **Ике иҫәп — бер хисап** тегеләй ҙә, былай ҙа ярай; барыбер. **Ике йөҙлө** тыштан яҡшы күренергә тырышып, күңеле менән насар булған, ысын йөҙөн йәшергән (кеше тураһында). *Ике йөҙлө булыу.* ■ *Маҡталған бай балаһы ике йөҙлө була ул, алда һине йыуатыр, ситтә ятты һөйәр ул.* М. Буранғолов. **Ике йөҙлө бысаҡ** ике яҡҡа ла ярарға тырышып алдап йөрөгән кеше. **Ике йөҙлөлөк** кешенең тыштан бер төрлө, эстән икенсе төрлө була алыу сифаты. **Ике күҙе дүрт булыу** үтә ныҡ аптырау, ғәжәпләнеү. **Ике күҙен дүрт итеп [көтөү]** зарығып, түҙемһеҙлек менән, үтә ныҡ [көтөү]. **Ике кәмәнең ҡойроғон тотоу** бер эш башҡарып ике төрлө мәсьәләне хәл итеү, ике маҡсатҡа ирешеү. **Ике ҡуллап** бик теләп, шатланып. *Ике ҡуллап, хуплап ҡаршылайбыҙ тимер юлсыларҙың был хатын.* Ғ. Мәсғүт. **Ике ҡулға бер эш** ниндәй ҙә булһа билдәле бер эш, шөғөл. *Ике ҡулыңа бер эш, ултырып эшләй генә бир.* **Икенең бере** ике төрлө мөмкинлек булғанда береһен һайларға кәрәклекте белдергәндә әйтелә. *Икенең берен һайлау.* ■ *Ҡолморҙа старшинаның танауына сүместәй йоҙроғон еҫкәтеп: йәнең ҡыйбатмы, малың ҡыйбатмы, икенең бере...— тине.* Т. Хәйбуллин. **Ике тамсы һыу кеүек** үтә ныҡ, айырып алғыһыҙ (оҡшашлыҡ тураһында).— *Әсәһе, улым бигерәк үҙемә оҡшаған, эйеме? — ике тамсы һыу кеүек, ирендәрен ҡымтыуына тиклем һинеке [тине әсәһе].* Р. Сыртланов. **Ике тин бер аҡса** бер нигә тормай, бер кәрәге юҡ. *[Яппаров — Сәлимәгә:] Әгәрҙә теләгең булһа, һине эшеңдән алыу ике тин бер аҡса.* С. Агиш. **Ике хаҡ** бик ҡыйбат. *Ике хаҡҡа алыу. Ике хаҡын һорау.* **Ике һүҙҙең берендә** (*йәки* **береһендә**) бик йыш, туҡтауһыҙ. *Фәхри үҙе сығыш яһауын яһаманы, ләкин ике һүҙҙең берендә: «Шулай* кәрәк...*» — тип һәр кемде ҡеүәтләп ултырҙы.* Б. Бикбай. **Ике уйлау** бер төрлө төплө хәл итә алмау, төрлөсә уйларға юл ҡалдырыу. *Ике уйлау, ике һөйләү тигәнде белмәҫ ҡыйыулығы бар шул уның [Зөлхизәнең].* З. Биишева. **Ике уртала** бер яҡҡа ла була алмай аптырауҙа булған хәл. *[Әсәһе — Гөлйөҙөмгә:] Мин ҡалай итәйем инде, ике уртала, ҡайһығыҙға булайым?.. Ни эшләп улай итеп атайың биргән ергә бармайым тигән хәбәр сығараһың?* Һ. Дәүләтшина. **Ике яры** икегә бүленеп. *[Тимерйән — Сөйөмбикәгә:] .. Иртәгә үк алып китәм үҙеңде. Эш тә белешеп ҡуйғанмын .. Етер, икебеҙ ике яры күп йәшәнек.* Ш. Янбаев. **Ике (***йәки* **ете) ятып бер төшөнә инмәү** уйлап та ҡарамау; иҫ китмәү. **Ул (***йәки* **шул) ике арала** *ҡар.* **ара** [1] 3. **Ике энә бер ептән, ике имән бер төптән** үтә ныҡ, һәйбәт (дуҫлыҡ тураһында).

● *Ике ҡулға бер эш.* Әйтем. *Илгә барған — ике ҡунған.* Мәҡәл. *Ирҙең йәше ике илле: береһе — шәкәр, береһе — бикәр.* Мәҡәл. *Ҡарғаның ике күҙе емдектә.* Мәҡәл.

**ИКЕГӘ** *р.* Ике өлөшкә, урталай. *Икегә айырыу. Икегә бөкләү. икегә ярыу.* ■ *Ул [егет] халыҡты ике ҡулы менән икегә айыра ла, килеп янды ала, уҡты ағасҡа күҙәп атып ебәрә* (Әкиәттән).

**ИКЕЛЕ** [1] *с.* Ике төрлө уйларлыҡ; шикле. *Икеле һүҙ.*

**ИКЕЛЕ** [2] *и. диал. ҡар.* **ике** 3.

**ИКЕЛЕ-МИКЕЛЕ** *с.* Аныҡ түгел, төрлө; бер тегеләй, бер былай. *Икеле-микеле һүҙ.*

**ИКЕЛӘНДЕРЕҮ** *к.* Төрлөсә уйларға урын ҡалдырыу. *Уның яуабы мине икеләндерҙе.*

**ИКЕЛӘНЕҮ** *к.* Бер фекергә килә алмай төрлөсә уйлау; шикләнеү. *Талипов башта Хафиз ҡартҡа һүҙ бирергәме, юҡмы, тигәндәй икеләнеп торҙо.* М. Тажи. *Заһиттың быуыны ҡалтырап китте. Инергәме, юҡмы тип, икеләнеп торҙо.* Я. Хамматов.

**ИКЕЛӘТӘ** *р.* Ике мәртәбәгә, ике тапҡырға. *Икеләтә артыу. Икеләтә кәмеү.*

**ИКЕНДЕ** *и.* Төш ваҡыты менән ҡояш байыған араның ҡап уртаһы. *Сәй эсергә ултырҙыҡ. Был ваҡыт инде ҡояш түбәнәйеп, икенде ваҡыты еткән ине.* А. Таһиров. **Икенде намаҙы** *ҡар.* **намаҙ.**

**ИКЕНСЕ** *рәт һ.* **1.** Урын тәртибе 2 менән билдәләнгән. *Икенсе өй. Икенсе урындағы кеше.*

**2.** *с. мәғ.* Башҡа, бүтән. *Икенсе бер ваҡыт. Икенсе кеше. Икенсе эш.* ■ *Был Балҡан тау булмай сыҡҡан, ен-бәрейҙәр ҡабаланып, бөтөнләй икенсе тауҙы күсереп килтергән* (Әкиәттән).

**3.** *с. мәғ.* Алдағы, киләһе. *Икенсе йыл. Икенсе көн. Икенсе юлы.* ■ *Яланбикә Гөлйөҙөмдө үсекләп көлә: «Икенсе юлы ауыҙыңды йыйып һөйлә».* Һ. Дәүләтшина.

**4.** *с. мәғ.* Ишле нәмәнең һыңары булған. *Икенсе күҙе. Икенсе ҡулы.*

**5.** *и. мәғ. һөйл.* Аштан (беренсенән) һуң бирелә торған ризыҡ. *Беренсегә кәбеҫтә ашы, икенсегә котлет алырға мөмкин.*

♦ **Һүҙҙе икенсегә бороу** һүҙҙе бүтән нәмәгә ку-

сереү. *Сәгиҙәнең тартынып теләр-теләмәҫ кенә яуап кайтарыуын күргәс, Гөлнур ҙа һүҙҙе икенсегә борҙо.* М. Тажи.

● *Кешене бер алдаһаң, икенсе ышанмаҫ.* Әйтем.

**ИКЕНСЕЛ** *с.* Башланғыс булмаған, нимәнеңдер һөҙөмтәһе булараҡ барлыҡҡа килгән йәки үҫештә икенсе баҫҡыста торған. *Материализм тәбиғәтте беренсел, рухты икенсел итеп ала.* В. И. Ленин. *Ягыулыкка һәм энергияга ихтыяж уларҙы бөтә саралар менән экономиялау һәм икенсел ресурстарҙы киң файҙаланыу нигеҙендә кәнәғәтләндерeләсәк.* «Совет Башҡортостаны», 1986, 21 ғинуар.

**ИКЕНСЕЛӘЙ** *р.* Башҡаса, икенсе тапҡыр. *[Сафура:] Икенселәй еңгә тип әйтмәҫһеңме, балдаҡ һорамаҫһыңмы?* Һ. Дәүләтшина. *Бер тапалган һуҡмактан икенселәй үтеүҙең ни кыҙыгы бар.* Ә. Вахитов.

**ИКЕНСЕЛӘНЕҮ** *ҡ.* Икенсе рәүешкә инеү, үҙгәреү. *Кешеләрҙең үҙҙәренә тапшырылган эшкә карашы бөтөнләй икенселәнде: малдарҙы ашатыу, тәрбиәләүҙә яңы методтар кулланыла башланы.* «Совет Башҡортостаны», 1965, 25 сентябрь.

**ИКЕНСЕНӘН** *инш.* Һөйләмдә берәй эш-хәлде һанап киткәндә әйтелә. *Кунакка барган сакта купшы кейенеү — уның [Ғарифтың] яраткан гәҙәте. Берҙән, быны кеше алдында һынатмау, икенсенән сакырган хужаларҙы хөрмәтләү тип карай ул.* Б. Бикбай.

**ИКЕРӘТ** *р. һөйл.* Ике мәртәбә, ике тапҡыр. *Икерәт барыу. Икерәт укып сыгыу.* ■ *Ул [Гәрәй] йүгереп барып тәҙрә аша Тимер Янһаровка икерәт атты.* Б. Бикбай.

● *Икерәт уй ит, берерәт туй ит.* Әйтем.

**ИКЕШӘР** *бул. һ.* Һәр бере икегә тиң. *Икешәр һум. Икешәр алма.*

**ИКЕШӘРЛӘП** *р.* Икешәр итеп (булып), пары менән, парлап. *Икешәрләп бәйләү. Икешәрләп ултыртыу. Икешәрләп теҙелеү. Икешәрләп бейеү.*

**ИКМӘК** *и.* **1.** Ҡамырҙан йомарлап, мейестә бешерелгән ашамлыҡ. *Ак икмәк. Арыш икмәге. Сөсө икмәк. Әсе икмәк. Икмәк кыйыры. Икмәк магазины. Икмәк мейесе. Икмәк тәпәне. Икмәк баҫыу. Икмәк бешереү. Икмәк иҙеү. Икмәк телеү. Икмәк һалыу. Икмәк әсетеү.* ■ *Икмәк — тормош нигеҙе, йәшәү тәрәге, донъяның иң ҙур кыуанысы, көс, көҙрәт ул.* «Совет Башҡортостаны», 1986, 28 ғинуар. **Таба икмәк** сөсө ҡамырҙан табала бешерелгән икмәк (тиҙ генә әҙерләп бешерелә). / Ашлыҡ, иген.

**2.** *һөйл.* Ашар аҙыҡ.

♦ **Икмәк серетеү** эшләмәй, буш ятыу. *Бакһаң, ул [Оңкот] ошо йортта .., улы-кыҙы елкәһендә үгеҙ кеүек елкә менән икмәк серетеп ята!* С. Кулибай. **Икмәк тимере** икмәк һалып бешерә торған тимер. **Көл нкмәге** *йәки* **күмгән икмәк** *кар.* **көликмәк. Ҡара икмәк** арыш икмәге. **Май икмәк** *кар.* **бауырһаҡ** [1].

● *Ил икмәге ирекле, эшләп ашаһаң — кимекле.* Мәкәл. *Ир икмәге — илдә.* Мәкәл.

**ИКМӘКЛЕ** *с.* Икмәккә (2 мәғ.) бай. *Икмәкле як.* ■ *Игенле Хәйбулла, бакырлы, рудалы һәм шулай ук мул икмәкле Баймак беҙҙе сәләмләп каршы алды.* К. Мәргән. *Бөгөн инде ауыл мул тормошло, электрлы, маллы, икмәкле.* Х. Ҡунаҡбай.

**ИКМӘКЛЕК** *с.* Икмәк бешереүгә тәғәйенләнгән, әҙерләнгән. *Икмәклек он. / кусм.* Икмәккә генә етерлек. *Икмәклек акса. Икмәклек эш хакы.*

**ИКМӘКЛӘП** *р.* Икмәк ҡушып. *Икмәкләп аш ашау. Икмәкләп сәй эсеү.*

**ИКМӘК-ТОҘ** *и.* Иң кәрәк аҙыҡ. *Сәлихтың атаһының эшләп тапканы икмәк-тоҙга гына етә, ә ит, һөттө аҙнага бер-ике тапкыр гына алалар.* Х. Мохтар.

♦ **Икмәк-тоҙ менән ҡаршы алыу** 1) рустарҙың ғөрөф-ғәҙәте буйынса, ситтән килгән кешегә ҡәҙер күрһәтеү өсөн ҡаршыһына икмәк-тоҙ тотоп сығыу; 2) ихлас күңел, яҡты йөҙ менән ҡаршы алыу. *Ауылдың байҙары [актарҙы] якты йөҙ, икмәк-тоҙ менән каршы алды.* С. Ханов.

**ИКМӘК-ТОҘЛОҠ** *с. һөйл.* Бик әҙ, самалы. *Икмәк-тоҙлок эш. // Ул [Усман] иҫәп-хисапка бик нокот, ә рус телен икмәк-тоҙлок кына ла белмәй.* Ғ. Ғүмәр.

**ИКРА́** [*рус.*] *и.* Йәшелсәне һ. б. ваҡлап, иҙеп әҙерләнгән ашамлыҡ. *Баклажан икраһы.*

**ИКРАМ** [*ғәр.*] *и. иҫк.* **1.** Хөрмәт. *[Акмулла] каҙактарҙың акындарга булган мөхәббәттәрен вә икрамдарын күр(гән).* Р. Фәхретдинов.

**2.** (*баш хәреф менән*) Ир-ат исеме.

□ **Икрам итеү** хөрмәтләү, ололау.

**ИКРӘНЕҮ** *ҡ. диал.* Екеренеү. *Түрәбайҙың асыуы кабарҙы,.. каршыһына баҫып икрәнеп торган Әкбәрҙе тибеп осорҙо.* Т. Хәйбуллин.

**ИКС** [*рус.*] *и.* **1.** Латин алфавитында арттан өсөнсө хәреф.

**2.** *мат.* Шул хәреф менән күрһәтелгән билдәһеҙ дәүмәл (x).

**3.** *һөйл.* Билдәһеҙ кешене йәки кешенең исемен махсус әйтергә теләмәгәндә ҡулланылған шартлы билдә.

**ИКСӘҮ** *ҡ.* **1.** Бысаҡ, ҡайсы һымаҡ нәмәләрҙе үткерләү өсөн нимәгәлер ҡабат-ҡабат ышҡыу. *Ҡайсыны энәгә иксәп үткерләү.*

**2.** *кусм.* Буштан ғәйеп табып, әрләп, өҙләкһеҙ тызыу; игәү. *Бер үк һүҙҙе иксәйһең дә тораһың.*

**ИКСӘШЕҮ** *ҡ.* Шелтәле, төртмәле һүҙ әйтешеү; ирешеү. *[Ғариф:] Етәр, етәр карттар .., былайтып иксәшеп ултырһак.., әҙәм көлкөһөнә генә калырбыҙ.* Ж. Кейекбаев.

**ИКТЕРЕҮ** *ҡ. йөкм. кар.* **игеү** [1]. *[Йәнтимер:] Үҙең ер башында ятып, машинанан иген иктереп булмай инде.* Ғ. Вәлиев.

**ИКҺЕҘ-СИКҺЕҘ** *с.* **1.** Осо-ҡырыйы күренмәҫ, иге-сиге билдәһеҙ; иркен, киң. *Икһеҙ-сикһеҙ яланда тулкынлана игенлек.* Н. Иҙелбай. *Был вакытта кейәү менән кыҙ йәйрәп яткан икһеҙ--сикһеҙ һөт күле буйын хозур итеп йөрөй ине, ти* (Әкиәттән).

**2.** Иҫәпһеҙ-һанһыҙ булған. *Икһеҙ-сикһеҙ халык.*

**ИКШЕҮ** *ҡ. диал.* Мәрәкәләшеү. *Беҙҙең якта еңгәләр кәйнеш менән шулай икшеп һөйләшә.* К. Кинйәбулатова.

**ИКƏН** *ярҙ. к.* **1.** Төрлө һүҙ төркөмдәре (ҡылым, исем, сифат һ. б.) менән яһалған ҡушма хәбәр составында фекерҙе асыҡлау, раҫлау өсөн ҡулланыла. *Бар икән. Юҡ икән. Дөрөҫ икән. Кәрәк икән. Ҡайтҡан икән. Атаһы эштә икән.* ■ *Зөләйха килгән икән, күрештек.* Т. Йәнәби. *[Карт:] Ҡаҙан тултырып ит бешергәнһең икән, миңә ашарға бир* (Әкиәттән). *Был байҙың ҡырҡ биш йылҡыһы булған, шуларҙың утыҙ дүрте бейә, алтыһы айғыр икән* (Әкиәттән). *Беҙҙең ҡоҙа хәлле икән, йыуасаһы баллы икән, ышанмаһаң, ашап ҡара, шәкәрҙән дә тәмле икән* (Халыҡ йырынан).

**2.** Һорау һөйләмдәрҙә ҡушма хәбәр составында билдәһеҙлек һ. б. эмоциональ мөнәсәбәтте белдереү өсөн ҡулланыла. *[Сәғиҙә:] Улымдың саңғыларын ағыҙып ебәрҙем. Ай, ниңә генә ташланым икән?!* М. Тажи. *Беҙҙең гәзиз баштарыбыҙ әйләнеп ҡайтырмы икән?* (Халыҡ йырынан). *Ситлектәге бикле һандуғастың һайрар талы ҡайҙа ҡалды икән?* (Халыҡ йырынан).

**3.** Шарт ҡылымдан һуң килеп, ыңғай теләкте белдерә. *[Яҡуп:] Их, егеттәр, .. бына үҙ бурысығыҙҙы ла шулай аңлаһағыҙ икән ул!* Б. Бикбай.

**4.** Юҡлыҡ формаһындағы бойороҡ ҡылымдан һуң килеп, кире теләкте белдерә. *Теләккәйең камил ай булмаһас, был донъякайҙарға тыума икән* (Халыҡ йырынан).

**5.** Үткән заман юҡлыҡ формаһындағы хәбәрҙән һуң килеп, эш йәки хәлдең былай йәки тегеләй башҡарылмағанына үкенес белдереүҙе аңлата. *[Рәхимә:] Тирмәне .. ҡалҡыуғараҡ ҡормағанһығыҙ икән.* Һ. Дәүләтшина.

**6.** Киләсәк заман ҡылымдың *-ыр/-ер* формаһынан һуң килеп, ғәжәпләнеүҙе белдерә. *Көҙ көнө лә мурҙаға балыҡ төшөр икән.* Б. Бикбай. *[Йомай:] Был тиклем остоҡай булырһың икән.* Һ. Дәүләтшина.

**7.** Эйәрсен һөйләмдә ҡушма хәбәр яһап, төрлө мөнәсәбәттәге һөйләмдәрҙе теркәй.— *Хәлеңдән килмәй икән, .. эш эҙләп сығып кит.* Һ. Дәүләтшина. *Борондан ҡалған бер йола икән, үткәрәйек.* Б. Бикбай. *[Егет] ҡамсы менән бер тартып алған икән, ҡарт эткә әйләнгән* (Әкиәттән). *[Ҡул эйәһе:] Шундай бер бәхлеүәнһең икән, минең менән йүгерешеп ҡара* (Әкиәттән).

◆ **[Да] икән ти** берәй эш-хәлгә әһәмиәт бирмәгәнде аңлатыу өсөн әйтелә. *Белмәгән дә икән ти, уның ни ғәйебе бар.* **Улай икән** кешенең һүҙенә йәки хәленә һығымта яһағанда әйтелә. *[Йәноҙаҡ:] Улай икән, ҡайтып киләм тиген, ә?* М. Тажи. **Ярай икән** берәй эш-хәлгә ҡарата теләк белдергәндә әйтелә; ярай ҙа ул. *Ярай икән, дуҫ күреп ышанған кешеләре .. малдарҙы кире ҡайтарһа.* Һ. Дәүләтшина.

**ИКƏНЛЕК** *ярҙ.* **и.** Ҡайһы бер (исем, сифат, һан, рәүеш һ. б.) һүҙ төркөмдәре менән ҡулланылып, уларҙың мәғәнәһен асыҡлап, раҫлап килә. *Бар икәнлеге. Зарарлы икәнлеге. Матур икәнлеге.* ■ *[Мулланың] күңеле туҡ, кәйефе яҡшы икәнлеге күренеп тора.* Ғ. Дәүләтшин. *Сәлмән ағайҙың, .. булдырам тигән эшен булдыра торған кеше икәнлеген белгәс, «ярай» тип вәғәҙә бирҙем.* Т. Йәнәби.

● *Таҙҙың таҙ икәнлеге бүркен һалғас беленер.* Мәҡәл.

**ИКƏС** *ярҙ. к. һөйл.* *-ҡас/-кәс* формаһындағы хәл ҡылымға ҡушылып, эш-хәрәкәттең тамамланып бөтөр-бөтмәҫтән киреһенә әйләнгәнен белдерә. *Ҡулыма алғас икәс төшөп китте.*

**ИКƏҮ** йыйн. һ. Ике кеше йәки нәмә. *Икәү һайраша-һайраша зинданда бер аҙ ятҡандан һуң, теге ҡош Алпамышаға ем килтереп аша та.* «Алпамыша». *Донъя тигеҙ булыр ине, икәү бергә ҡауышһаҡ* (Халыҡ йырынан).

**ИКƏҮ-АРА** *р.* Ике кеше бер-береһе менән, үҙ-ара. *Егет ауылдағы бер матур ҡыҙға ғашиҡ булып, икәү-ара һөйләшкәндән һуң, береһе бармаҡ, икенсеһе алмаҡ булған.* Ғ. Сөләймәнов. / Ике кеше бер-береһенә; үҙ-ара. *Икәү-ара ярҙам итешеү.*

● *Берәүҙән икәү яҡшы, икәүҙән өсәү яҡшы.* Әйтем.

**ИКƏҮҘƏН-ИКƏҮ** *р.* Икәүләп кенә, бары тик икәү (кешегә ҡарата). *Икәүҙән-икәү ҡалыу.* ■ *Ҡарағаста икәүҙән-икәү йәшәү Заятүләкте екһетә башлай.* «Заятүләк менән Һыуһылыу».

**ИКƏҮЛƏП** *р.* Ике кеше бергә, парлап.— *Мин Аҡъял батыр, ә был Тау батыр була. Икәүләп донъя ҡыҙырып йөрөйбөҙ,— тигән Аҡъял батыр* (Әкиәттән). *Яңғыҙ бейеү яйһыҙ булһа, әйҙә төштөк икәүләп* (Халыҡ йырынан).

**ИКƏҮЛƏШЕП** *р.* Икеһе бергә. *Улар игендә икәүләшеп тиҙ генә бушата һалып алды.* Һ. Дәүләтшина.

**ИҠАМƏТ** [*ғәр.*] *и. иҫк. кит.* **1.** Берәй нәмәнең билдәле урында торошо, булмышы.

**2.** Намаҙ алдынан аяҡ үрә уҡыла торған доға.

□ **Иҡамәт итеү** билдәле бер урында тороу, йәшәү. *1923 йылдың августында хәҙерге көндә иҡамәт иткән йортҡа күстек. Был йортта ун бер йыл торҙоҡ инде.* М. Ғафури.

**ИҠБАЛ** [*ғәр.*] *и. иҫк.* **1.** Уңыш, бәхет. *Ана, дәүләт, ана еңеү һәм иҡбал.* М. Ғафури. *Юлдарымда сәд, ауҙар ҡоролған. Күренмәй иҡбал, ҡап-ҡара урман.* С. Ҡудаш.

**2.** (*баш хәреф менән*) Ир-ат исеме.

**ИҠЛИМ** [*ғәр.*] *и. иҫк.* **1.** Климат. *Тау иҡлиме.*

**2.** Боронғо ғилем буйынса, ерҙең экваторҙан төньяҡ ҡотопҡа тиклем булған ете климатик бүленешенең һәр бүлкәте. *Ете иҡлим.*

**ИҠНАҒ** [*ғәр.*]: **иҡнағ итеү** *иҫк. кит.* ышандырыу. *Тапманым мин донъяла иҡнағ итерлек бер ысул.* С. Ҡудаш.

**ИҠРАР** [*ғәр.*] *и. иҫк. кит.* Танмай, дөрөҫөн әйткән һүҙ.

□ **Иҡрар итеү** танмай, дөрөҫөн әйтеү, үҙ ғәйебеңде дөрөҫләү. *[Нәүширбан — Зөлхизәгә:] Үҙ хатаңды иҡрар итеү ауыр, ләкин башҡа сара юҡ.* Ә. Мирзаһитов.

**ИҠТИДАР** [*ғәр.*] *и. иҫк. кит.* Көс, ҡеүә. *Аҡмулланың ғилеме вә иҡтидары Шәмсетдин суфый дәрәжәһенән түбән булыр, тигән һүҙ менән килешеп булмай.* Ә. Харисов.

**ИҠТИСАД** [*ғәр.*] *и. иҫк. кит.* Экономика.

□ **Иҡтисад яһау** һаҡлап тотоу, экономия яһау. *Яңы материалдарына иҡтисад яһауҙа айырыуса өлгәшеүҙәр бар.* «Совет Башҡортостанына ун йыл», 1929.

**ИКТИСАДИ** [*ғәр.*] *с. иҫк.* Экономик. *Иктисади сәйәсәт.* ■ *Һуңғы йылдарҙа башкорт эшсәндәре иктисади яктан үҫеү менән бергә, мәҙәни яктан да сагыштырмаҫлык рәүештә үҫте.* Т. Йәнәби.

**ИКЫК** *и. диал.* Сикак.

**ИЛ** [1] *и.* **1.** Үҙ сиге, халкы, идараһы булған дәүләт. *Совет иле. Ил сиге. Ил һаклау. Ил гиҙеү.* ■ *Үҙ илкәйе өсөн корбан булган ир-егеттең ғүмере йәл булмаҫ* (Халык йырынан). *Карсыгалай уткер ялан егетен ил сигенә һаксы иттеләр.* К. Даян. **Сит ил** 1) сит дәүләт; 2) ят урын. *Сит илдәрҙә, сит ерҙәрҙә яңгыҙ башым нишләрмен* (Халык йырынан).

**2.** (*йәки* **тыуғаи ил**) Тыуып үҫкән, йәшәгән ер; ватан. *Ят ил.* ■ *Атайың яу аҫһа ла, тайшанмаҫка уйым бар! Үҙ егетен яңгыҙлатмаҫ Урал тигән илем бар!* (Кобайырҙан). *Алыҫ кына калды шул тыуган илкәйем, Ирәндекәй буйында үҫкән еркәйем* (Халык йырынан).

**3.** Халык. *Ил акылы. Ил араһы. Ил бәхете. Ил зары. Ил кайгыһы. Ил намыҫы. Ил күрке булыу. Ил менән хәл итеү.* ■ *[Айбулат:] Етәр, Гөлйөҙөм, илама. Бер мин түгел бит, ил менән.* Һ. Дәүләтшина. *Салауат батыр ир ине, менгән аты кир ине. Дошман менән алышканда ил эсендә бер ине* (Кобайырҙан).

**4.** *һөйл.* Ауыл. *Ил халкы.* ■ *Ил Тамды һыуы буйында оҙак ултырҙы.* А. Таһиров. *Ике-өс көн эсендә йәйләүҙәге бөтә ил күсеп тә китте.* И. Көҫәпкол.

◆ **Ил ағаһы** оло, дәрәжәле, абруйлы ир кеше. **Ил аҙаматтары** илдә акылы, якшы эше, кыйыулығы менән дан алған кешеләр. *Ул [Колморҙа] старшина Тупак ауылынан сыкмаҫ борон ук, ил аҙаматтарын йыйнап, кунак яһап, һый таратып китте.* Т. Хәйбуллин. **Ил ауыҙы** күмәк халыктың һөйләгән һүҙе, теле. **Ил аяғы һил булыу** караңғы төшөп, кеше йоклап бөтөп, тирә-якта тынлык урынлашыу. **Ил ғәрибе** тыуып үҫкән иленән айырылып, алыҫта йәшәгән кеше. *[Маянһылыу:] Илдән илгә йөрөһәң дә, атай, ил гәриптәре булһаң да, атай, Куҙыйкүрпәс кеүек аҫыл егетте таба алмаҫһың, атай.* «Куҙыйкүрпәс менән Маянһылыу». **Ил карттары** күп йәшәп, күпте күреп, халык араһында хөрмәт казанған акыллы карттар; акһакалдар. *[Хажигәли:] Кабатлап әйтәм: ил карттары, ағай-энеләр, был эштә минең һис бер катышым юк, хаклык касан булһа ла бер табылыр ул.* М. Тажи. **Илдән сыккан** аҙакҡы сиккә еткән, нык боҙолған. *Илдән сыккан аҙгын. Илдән сыккан алдаксы. Илдән сыккан бур.* **Ил өҫтө** ил, халык араһы. *Ил өҫтөндә йөрөү.* **Ил өҫтөндә имән сөй** *кар.* **сөй.**

● *Ил ауыҙына иләк каплап булмай.* Әйтем. *Ил өҫтөндә илле дуҫың булһын.* Мәкәл. *Ил төкөрһә, күл була.* Мәкәл. *Сит илдә солтан булганса, үҙ илеңдә олтан бул.* Мәкәл. *Һыуһыҙ ергә йорт корма, утынһыҙ ергә ил корма.* Әйтем.

**ИЛ** [2] *и. диал. кар.* **күс** [1] **1.**

**ИЛ** [3] *с. диал.* Тыныс, татыу. *[Рәхимә — Мәгфүрәгә:] Әгәр Айбулат үҙебеҙгә ил булып, кырыҫланмай баш һалып килһә, агаһы ситкә какмаҫ.* Һ. Дәүләтшина.

**ИЛАК** *с.* **1.** Юкка-барға илап барыусан. *Илак бала. Илак булыу.* ■ *Эштәрҙе эшләп бөтөрөүгә, еңгәй үҙенең илак балаһын карарга куша.* М. Ғафури. *Ун йәшенә тиклем һаман мыжык, һаман илак булды Әпеше.* Д. Юлтый.

**2.** *һөйл.* Юкка-барға зарланыусан. *Илак кеше.*

**ИЛАКЛАНЫУ** *к.* Илакка әйләнеү, илак булыу.

**ИЛАМҺЫРАУ** *к.* Илаған киәфәткә килеү, илай яҙыу. *Иламһыраған тауыш. Иламһырап ултырыу. Иламһырап һөйләү.*

**ИЛАН** *бәйл. иҫк. кар.* **менән.** *Нитәкки әҙәм гәлиәссәләм иблис мәлгүндең ялган һүҙе илан дәрәжәһенән төштө.* М. Өмөтбаев.

**ИЛАП-ҺЫКТАП** *р.* Күҙ йәше менән әсенеп, зарланып. *Кыҙ илап-һыктап егеткә инәлә башлай: «Егет, ыскындыра күрсе, тоҙакка каптым бит әле мин»* (Әкиәттән). *Шул сак килә теге малай көскә атлап, куркыуынан төҫө касып, илап-һыктап.* «Бабсак менән Күсәк».

**ИЛ-АРА** *с. һөйл.* Ил эсендәге. *Ил-ара талаш.*

**ИЛАТЫУ** *к. йөкм. кар.* **илау.** *Батша кафыр һалдат ала, йәш егетте илатып* (Бәйеттән).

◆ **Кан илатыу** бик нык йәберләү. *Кан илаткан был түрәләрҙең кырк быуынынан турап утка һалһаң да үс канмаҫ.* Т. Хәйбуллин.

● *Дуҫ илатып өйрәтер, дошман көлөп көйрәтер.* Мәкәл.

**ИЛАУ** *к.* **1.** Күҙҙән йәш түгеү (кайғы-хәсрәттән, ауыртыу-һыҙланыуҙан йәки башка ауыр хистән). *Быуылып илау. Сеңләп илау. Үкереп илау. Үкһеп илау. Һулкылдап илау.* ■ *Кола бейә, меҫкенкәйем .. малкайым, тип һылыу әбей ауыҙын бәлшәйтеп илап та ебәрҙе.* Т. Йәнәби. *Аҙна буйына көн иланым, төн иланым, аягымдың һыҙлауына тәкәт тотоп булманы.* Д. Юлтый. **Ер тырнап илау** оло кайғынан әсенеп илау. **Ер-һыу илау** бик нык түгелеп, кешеләргә белдереп илау. *Буйына еткән Шәмсекәмәр еңгәм һалдат оҙатканда ошо капка төбөнә килеп, ер-һыу илап калды.* Ғ. Вәлиев. **Зар илау** 1) әсенеп илау. *Һагыштан зар илап, уҙган яуҙы уйлап, ауыр яраңды һин, әсәй, куҙғатма.* А. Игебаев; 2) нык әсенеү, хәсрәтләнеү. *Буранбайҙың яҙган хатын укып, зар илайҙыр ауыл карттары* (Халык йырынан). **Күҙ йәше менән илау** иламаҫ урында ысынлап-тороп илау. **Кан илау** 1) бик нык кайғырыу, каты кайғынан әсенеп илау; 2) *күсм.* ауыр михнәттән яфа сигеп зарланыу. *[Сафыя:] Йәйгелеккә балалар яслеһе яһағанда. .. Кан илай бит йәш балалы бисәкәйҙәр.* Ә. Мирзаһитов.

**2.** *һөйл.* Берәй нәмәгә кайғырып зарланыу. *Балаларына рәнйеп илай ҙа йөрөй.*

◆ **Илау һалыу** юкка-барға бәлә һалыу, һүҙ сығарып илаулау.

● *Иламаған балага имсәк бирмәйҙәр.* Мәкәл. *Көлгәндән һорама, илагандан һора.* Мәкәл.

**ИЛАУЛАТЫУ** *к.* Илаған кеүек итеү. *Илаулатып һөйләндереү.* ■ *[Хәҙрәт] йырлап барган пионерҙарға осраны, аптырап ни әйтергә белмәй бер аҙ карап торҙо ла: «Нишләп быларҙың ауыҙҙарын кирҙереп, илаулатып йөрөтәләр икән?..» — тип алга китте.* И. Насыри.

**ИЛАУЛАУ** *к.* Иларҙай булып, зарланып һөйләнеү. *Илаулап йөрөү.* ■ *[Бибисара:] «Я алла,*

*ишек яңағы яткырмайҙар. Нисә килмә — кеше, нисә карама — кеше. Үҙ балаң янына килә алмай зар-интизар булаһың»,— тип илаулап түргә уҙҙы.* З. Биишева.

**ИЛАУ-ҺЫҠРАУ** *и. кар.* **илау-һыҡтау.**

**ИЛАУ-ҺЫҠТАУ** *и.* Илаған, һыҡтаған зар. *Аһ-зар иңрәү һәм илау-һыҡтау менән тулды урам.* Д. Юлтый.

**ИЛАҺ** [*ғәр.*] *и. дини иҫк.* Алла, тәңре. *Киләләр. .. Алда Гапон поп, кулда тәре һәм йырлайҙар: «Илаһ, һакла падишаһты!»* Ғ. Хәйри. *Халыҡ меңкен уйынсаҡ, кем көслө — шул булды илаһ.* М. Ғафури.

**ИЛАҺИ** [*ғәр.*] *с.* **1.** *дини* Аллаға бәйләнешле, аллаға мөнәсәбәтле. *Илаһи донъя.*

**2.** *күсм.* Тәбиғәттән өҫтөн; серле, тылсымлы. *Илаһи хис.* ■ *[Мифтах:] Ә ни өсөн ул юғарынан килә? [Шәмсетдин:] Сөнки шиғриәт ул илаһи нәмә.* К. Мәргән. / Иҫ киткес яҡшы, һоҡландырғыс. *Илаһи матурлыҡ.* ■ *Ул илаһи моңдар менән коштар һайрай кыҙыл гөлдәргә баҫып.* Д. Юлтый.

**ИЛАҺИЛАШТЫРЫУ** *к.* Иҫ киткес яҡшы, һоҡланғыс итеп күреү; идеаллаштырыу. *Ниндәй генә эшкә тотонмаһын, иң тәүҙә кеше уны үҙ хыялында күрә, уны илаһилаштыра.* «Совет Башҡортостаны», 1964, 1 февраль.

**ИЛАҺЫМ, эй илаһым** *ымл.* Ныҡ аптырағанда, ғәжәпләнгәндә әйтелә. *[Рәхимә:] Эй илаһым, был донъяла ниҙәр генә кубып ята икән, мин генә белмәйем.* Һ. Дәүләтшина.— *Ҡара әле, анауы курай сираклы ғына кыҙ, үҙе кайһылай шәп йүгерә. Аягына күҙ эйәрмәй, илаһым.* Р. Низамов.

**ИЛАҺӘ** [*ғәр.*] *и. иҫк.* Ҡатын-кыҙ затынан булған алла; катын алла.

**ИЛАШ** *и.* Күмәк илау. *Мин бер юлы ике повестка алам. .. Өйҙә илаш китә.* И. Ғиззәтуллин.

**ИЛАШЫУ** *к. урт. кар.* **илау.** *Беҙ ауылдан киткән сакты .. үкереп илашып калдылар* (Бәйеттән).

**ИЛБАҪАР** *и.* Башҡа илгә ҡорал көсө менән баҫып ингән халыҡ төркөмө йәки шәхес.

**ИЛБАҪАРЛЫҠ** *и.* Илбаҫар булыу; баҫып алыу. *Илбаҫарлыҡ политикаһы.*

**ИЛГИҘӘР** *и.* **1.** Донъя гиҙеп, ил өйрәнеп, ил күреп йөрөгән кеше; сәйәхәтсе.

**3.** (*баш хәреф менән*) Ир-ат исеме.

**ИЛГӘҘӘК** *с.* Кешегә асыҡ йөҙ, ихлас һүҙ менән тиҙ аралашыусан; алсаҡ. *Ҡара һин уны, ниндәй илгәҙәк малай! Танышыуыбыҙға ун биш минут юк. Инде ғүмере бергә дуҫ йәшәгән кешеләрсә якын күреп һөйләшә.* Ф. Иҫәнғолов. *Холоҡ яғынан да ул [Юлдаш] Ҡыҙрас кеүек теремек, илгәҙәк түгел. Киреһенсә, ауыр колокло, аҙ һүҙле.* З. Биишева.

**ИЛГӘҘӘКЛЕК** *и.* Илгәҙәк булған хәл. *Балалар илгәҙәклеге аркаһында иптәштәре менән тиҙ аралаша.*

**ИЛГӘҘӘКЛӘНЕҮ** *к.* Илгәҙәккә әйләнеү, илгәҙәк булыу. *Балаларҙың тиҙ арала якынайып, илгәҙәкләнә башлауҙарына Сәғиҙә эсенән кыуанып бөтә алманы.* М. Тажи.

**ИЛДЕК** *и. диал.* Йотлоҡ. *Кәкүк кара сыбыкка килһә, ашлыҡ уңа; япракка килһә, илдек була.* Һынамыш.

**ИЛДЕМ-ЯЛДЫМ** *с. диал.* Алсаҡ.

**ИЛЕ** *и.* Бер бармаҡ киңлегендәге боронғо үлсәү берәмеге. *Бер иле калынлыктағы такта.* ■ *Түйға дүрт иле каҙыһы сыккан йылкы һуйылды.* З. Биишева.

◆ **Бер иле [лә]** берәй нәмәнең күләмен, дәрәжәһен арттырып йәки кәметеп әйтеү өсөн ҡулланыла. *Бер иле калмай эйәреп йөрөү. Иҙәнгә бер иле баткак каткан.*

**ИЛЕГЕҮ** (илек*ә*) *к.* Кешегә өйрәнеп, яҡынайып, үҙ итеү; эйәләшеү. *Малайҙарға бөтөнләй илегеп киткән колон .. арттарынан эйәреп йөрөй.* Х. Мохтар.

● *Бүре балаһын бүреккә һалһаң да илекмәҫ.* Мәҡәл.

**ИЛЕГЕШЕҮ** *к.* Бер-береңә ныҡ өйрәнешеү, үҙ-ара эҫенеү; эйәләшеү.

**ИЛЕК** *и.* Боландар ғаиләһенә ҡараған көйшәүсе һөтимәр кейек; ҡоралай. *Тәбиғәте матур был урындың: сылтырап аға тауҙан шишмәләр. Илек, болан, мышы — күп кейектәр, шишмәләрҙән һыуҙар эсәләр.* Б. Вәлит.

**ИЛЕКТЕРЕҮ** *к.* Яҡынайтып, эҫендереп өйрәтеү; эйәләштереү. *Ҡыр йәнлектәрен илектереү.*

**ИЛЕКҺЕТЕҮ** *к.* Хискә тулыштырыу. *Йоҡо аралаш ишетелгән моң илекһетеп ебәрҙе.* Р. Солтангәрәев.

**ИЛЕКҺЕҮ** *к.* Хискә тулышыу; болоҡһоу. *Күңел илекһеп китте.*

**ИЛЕМ** *с. диал.* Илгәҙәк.

**ИЛЕРЕК** *и.* Йоҡоһонда тороп йөрөгән кеше. *Илерек булыу.*

**ИЛЕРЕҮ** *к.* **1.** Йоҡола һаташып йөрөү. *Илереп тороп китеү.*

**2.** *күсм.* Берәй ауыр хәлдән иҫте йыя алмай ҡаңғырыу. *Ҡайғынан илереп йөрөү.* / Берәй уй, ниәт менән ҡаңғырыу, аптыраныу. *[Таһыл:] Әй, куйсәле, бисә! Илерһәләр, илерһендәр! Батшаһына ла, бейенә лә карамам, карындашымды Юлдыкайға бирермен.* Х. Ғәбитов.

**ИЛЕРТЕҮ** *к.* Аңҡы-тиңке итеү, ҡаңғыртыу, аптыратыу. *[Ҡарасәс:] Айсыуактар илертәләр: һәпрә тыуған кара балаҡ, тип.* Х. Ғәбитов.

**ИЛ-ЙОРТ** *и. йыйн.* Тыуған ил һәм шунда йәшәгән халыҡ. *Ирекһеҙҙән ил-йортонан биҙгән .. Зөлкәрнәй менән Зөлхизә Ирәндектә .. ирektә йәшәй биргән.* Н. Иҙелбай. *Аманлашып, хушлашып ил-йорт менән, батыр Бабсаҡ Мәсем ханға китеп калды.* «Бабсаҡ менән Күсәк».

**ИЛКЕ-ҺАЛҠЫ** *р.* Әһәмиәт тә, иғтибар ҙа бирмәй; арлы-бирле. *Илке-һалкы йөрөү. Илке-һалкы эшләү.* ■ *Әптер Шакирҙың былай илке-һалкы һөйләшеүен яратманы.* Һ. Дәүләтшина. *Көндәрең дә илке-һалкы үтә, бик арамъя ғына эшләйһең.* Б. Вәлит.

**ИЛКӘНЛӘҮ** *к. диал. кар.* **йөҙөү** 3.

**ИЛЛА** [*ғәр.*] **1.** *ымл.* Берәй нәмәгә ғәжәпләнгәндә, һоҡланғанда, ризаһыҙлыҡ белдергәндә әйтелә. *[Булат:] Илла тынғыһыҙ кеше булдың да һуң, корҙаш!* Б. Бикбай. *[Оркыя:] Эй, Юлтый ағай, илла һүҙеңдә тормайһың да инде.* Н. Хафизов.

**2.** *киҫ.* Бойороҡ ҡылым менән килеп, шуның

мәғәнәһен көсәйтә. *Илла оҙаклама.*

**3.** *кире терк.* Ҡаршы мәғәнәле һөйләмдәрҙе теркәй; әммә. *Һәләтле егет ул, илла ялкаулығы көслө.*

**ИЛЛА-АЛЛА: илла-алла менән** 1) ҙур ауырлыҡ менән; көс-хәл менән. *Сәғиҙә карсыҡтың быйыл кайғылары .. ҙурайып китте. Улы Исхаҡ та быйыл илла-алла менән кәләш алып бирәбеҙ тип торғанда, һуғышка ҡыуылып китеп барҙы.* Һ. Дәүләтшина; 2) көс-хәл менән, саҡ-саҡ. *Йәшен бәргән һайын беҙҙең былай ҙа .. илла-алла менән генә торған өйөбөҙ дер калтырай, тәҙрә быялалары сыңлап тора.* Ә. Вәли.

**ИЛЛА-МӘГӘР** *ымл. кар.* **илла** 1. *Илла-мәгәр теңкәгә тейҙең бит. Илла-мәгәр һуңлама.* ■ *[Әминә әбей Айнурға:] .. Кәзәмдең ике бәрәсе бар бит инде. Бәрәстәрен Сабирйән бабайың көҙгә һуйып, итен берәйһе артынан ебәрер, илла-мәгәр кәзәне тотонмайбыҙ.* Н. Мусин. *[Ҡарт:] Ғүмеремдә бик күп алйот күрҙем, илла-мәгәр һинең ишене күргәнем юҡ ине әле* (Әкиәттән).

**ИЛЛЕ** *төп һ.* 50 һаны. *Илле биш.* / Кем йәки нәмәнеңдер 50-гә иҫәбе. *Илле йәш. Илле һум.* ■ *Арышым һис бөтәсәк түгел тип уйлаған Гөлбоҫтан уны-быны карап торманы, ботон илле тиндән һата һалды ла, калас, лампасый алып, өйөнә йомолдо.* Ғ. Дәүләтшин.

● *Ике кәңәш бер булһа, илле егет йөҙ була.* Мәҡәл. *Иллелә иҫәр ҙә ипкә килер.* Мәҡәл.

**ИЛЛЕЛЕК** *и. һөйл.* Илле һумлыҡ аҡса.

**ИЛЛЕЛӘП** *сама һ.* Илле тирәһе, иллегә яҡын. *Иллеләп укыусы. Иллеләп кеше.* ■ *.. Уның күҙ терәгән .. улына ни бары биш баш ат, ун һыйыр, иллеләп һарыҡ кына каласаҡ бит!* В. Бикбай.

**ИЛЛЕНСЕ** *рәт һ.* Урын тәртибе 50 менән билдәләнгән. *Илленсе йылдарҙа. Илленсе кеше. Илленсе булыу. Илленсе итеү.*

**ИЛЛЕШӘР** *бүл. һ.* Һәр бере иллегә тиң. *Иллешәр ат. Иллешәр һум. Иллешәр йорт.*

**ИЛЛЕШӘРЛӘП** *р.* Иллешәр итеп, иллешәр булып. *Иллешәрләп бүлеү. Иллешәрләп теҙеү. Иллешәрләп һалыу.*

**ИЛЛӘ** *ымл. кар.* **илла** 1.

**ИЛЛЮЗИОНИ́ЗМ** [*рус.* ⟨ *фр.*] *и.* Махсус ҡорамал ярҙамында төрлө фокус күрһәтеү эше.

**ИЛЛЮЗИОНИ́СТ** [*рус.*] *и.* Махсус ҡорамал ярҙамында төрлө фокус күрһәткән артист. *Иллюзионист булыу.* ■ *Фаршатов эстрадала үҙенең һөнәрен күрһәтеүсе иллюзионисты хәтерләтә ине.* Ә. Харисов.

**ИЛЛЮ́ЗИЯ** [*рус.* ⟨ *фр.*] *и.* Ялған тойғо нигеҙендә булмыштың боҙолған рәүештә күҙ алдына килтерелеше. / Ниҙер тураһындағы ялған төшөнсә. *Иллюзияға бирелеү.*

**ИЛЛЮМИНА́ТОР** [*рус.* ⟨ *лат.*] *и.* Герметик рәүештә ябыла торған түңәрәк тәҙрә (самолёт йәки судно һ. б. була).

**ИЛЛЮМИНА́ЦИЯ** [*рус.* ⟨ *лат.*] *и.* Берәй тантана, байрам хөрмәтенә урам, йорттарҙы биҙәү өсөн яҡтыртылған төрлө төҫтәге ут. *Иллюминация яһау.* ■ *Урамдарҙа күҙ сағылдырып төрлө төҫтәге иллюминация токанды.* З. Әхмәтов.

**ИЛЛЮМИНАЦИЯЛАНЫУ** *к. төш. кар.* **иллюминациялау.**

**ИЛЛЮМИНАЦИЯЛАУ** *к.* Иллюминация яһау. *Урамды иллюминациялау. Йорттарҙы иллюминациялау.*

**ИЛЛЮСТРАТИВ** [*рус.* иллюстративный] *с.* Иллюстрация булып хеҙмәт иткән, иллюстрация рәүешендәге. *Иллюстратив материал.*

**ИЛЛЮСТРА́ТОР** [*рус.*] *и.* Текстка бәйләп һүрәт эшләгән художник.

**ИЛЛЮСТРА́ЦИЯ** [*рус.* ⟨ *лат.*] *и.* **1.** Текстка бәйләп эшләнгән һүрәт. *Иллюстрация эшләү.*

**2.** *күсм.* Ниҙелер күрһәтеп, асыҡлап аңлатып торған миҫал.

**ИЛЛЮСТРАЦИЯЛАНЫУ** *к. төш. кар.* **иллюстрациялау.**

**ИЛЛЮСТРАЦИЯЛАУ** *к.* **1.** Тексты иллюстрация менән тәьмин итеү. *Китапты иллюстрациялау.*

**2.** *күсм.* Асыҡ миҫал ярҙамында аңлатыу.

**ИЛЛЮСТРАЦИЯЛЫ** *с.* Иллюстрация менән биҙәүле; һүрәтле. *Иллюстрациялы журнал. Иллюстрациялы китап.*

**ИЛПӘК** *с. диал.* Илгәҙәк.

**ИЛСЕ** *и.* **1.** Юғары дәрәжәле дипломатик вәкил. *Дәүләт илсеһе. Илсе булып йөрөү. Илсе ебәреү. Илселәр кабул итеү.*

**2.** Үҙ-ара һуғыш алып барған ил йәки ғәскәрҙең береһенән икенсеһенә һөйләшергә ебәрелгән кеше.

**3.** *тар.* Мөһим йомош, маҡсат менән халыҡтар төркөмөнән ебәрелгән вәкил. *Илсе ебәреү. Илсе булып килеү.* ■ *Теге карт батша үтенес хаты яҙып, егерме илсе, кырк һаксы ебәреп, Таҙҙы үҙ батшалығына килтертте, ти* (Әкиәттән).

**4.** *күсм.* Хәбәр килтереүсе; алдан хәбәр итеүсе.

● *Илсегә үлем юҡ.* Әйтем.

**ИЛСЕЛЕК** *и.* Бер илдең икенсе илдәге дипломатик вәкәләте һәм шул вәкәләт урынлашҡан йорт.

**ИЛТАБАН** *с. диал.* Уҫал.

**ИЛТЕЛЕҮ** *к. төш. кар.* **илтеү.**

**ИЛТЕР** *и.* Йәш бәрәс тиреһе. *Илтер бүрек. Илтер күн.*

**ИЛТЕҮ** *к.* Билдәле бер ергә алып барыу. *Илтеп биреү. Илтеп куйыу. Күтәреп илтеү. Тейәп илтеү.* ■ *Заятүләкте Ҡағас тауына илтеп ташлайҙар.* «Заятүләк менән Һыуһылыу».

**ИЛТИЗАМ** [*ғәр.*] *и. иҫк. кит.* Тейеш һаналған, кәрәк табылған эш.

□ **Илтизам итеү** тейеш һанау, кәрәк табыу.

**ИЛТИМАС** [*ғәр.*] *и. иҫк. кит.* Һорау, үтенес. *Был илтимас, ғаризалар хосусында рәхимле шаһыбыҙ Бабил Битров мәрхәмәт итеп зимләмирҙәр ебәрҙе.* «Башҡорт шәжәрәләре», 1960.

**ИЛТИФАТ** [*ғәр.*] *и.* **1.** Иғтибар, диҡҡәт. *Илтифат биреү. Илтифатка алыу.* ■ *Ғәйшә теләй һүҙҙе бороорға .. Ҡадир һалмай уға илтифатын, үҙенекен һөйләй һаман да.* Ғ. Амантай.

**2.** Иғтибарлы, йылы мөғәмәлә; ихтирам. *Илтифат менән кабул итеү. Илтифат күрһәтеү.*

□ **Илтифат итеү** иғтибар күрһәтеү.

**ИЛТИФАТЛЫ** *с.* **1.** Йылы, яҡшы мөғәмәләле; кешегә иғтибарлы, ихтирамлы. *Илтифатлы булыу.* ■ *Ул [Ғ. Туҡай] кешегә яғымлы, илтифатлы, йәштәрҙе һәр вакыт укырға димләй ине.* «Башҡортостан уҡытыусыһы», 1966, № 4.

2. Иғтибарлы, дикҡәт итеүсән. *Илтифатлы кеше.*

**ИЛТИФАТҺЫҘ** *с.* **1.** Хөрмәт итмәүсән, ихтирамһыҙ, хәстәрлекһеҙ. *Илтифатһыҙ булыу.*

**2.** Иғтибарһыҙ, дикҡәтһеҙ. *Хәлфә минең һүҙҙе илтифатһыҙ ҡалдырманы, яуап биреп китте.* М. Ғафури.

**ИЛТТЕРЕҮ** *к. йөкм. кар.* **илтеү.**

**ИЛҺАМ** [*ғәр.*] *и.* **1.** Эшкә, ижадҡа көс, дәрт уятҡан күтәренке рух. *Илһам алыу. Илһам биреү.* ■ *Һыҙ, ҡурай, һыҙ, йәш йөрәктәр һинән илһам алһындар.* Т. Йәнәби. **Илһам шишмәһе** дәрт, көс, күңел күтәренкелеге биргән сығанаҡ.

**2.** (*баш хәреф менән*) Ир-ат исеме.

**ИЛҺАМЛАНДЫРЫУ** *к.* Эшкә, ижадҡа көс, дәрт уятыу.

**ИЛҺАМЛАНЫУ** *к.* Эшкә, ижадҡа теләк, дәрт тойоу; дәртләнеү. *Илһамланып эшләү.*

**ИЛҺАМЛЫ** *с.* **1.** Илһам менән һуғарылған. *Илһамлы шағир.*

**2.** Илһам уятҡан, илһам биргән. *Эй ғәзиз кис, йәмле кис һәм йәнле кис, илһамлы кис.* Ш. Бабич.

**ИЛҺАМСЫ** *и.* Илһам биреүсе. *Ерҙә ҡыҙҙар, нурлы йөҙҙәр — йәш күңел илһамсыһы.* Б. Ишемғол.

**ИЛҺЕНЕҮ** *к.* Йәшәгән ерҙе үҙ итеү, яҡын күреү; ерһенеү. *Ул был урынды илһенде. Сит ерҙе илһенмәү.*

**ИЛҺЕРӘҮ** *к.* Илдән яҙып зарығыу. *Сит илдәрҙә илһерәп йөрөү.*

**ИЛҺӨЙӘР** *и.* **1.** Тыуған илен ныҡ яратҡан, үҙ иле өсөн янған кеше.

**2.** (*баш хәреф менән*) Ир-ат һәм ҡатын-ҡыҙ исеме.

**ИЛ-ҺҮЛ** *и. йыйн. кар.* **ил-һыу.** [*Йылҡыбай — Аллабирҙегә:*] *Ил-һүлде курсыуһыҙ ҡалдырыуың бар.* «Алдар менән Зөһрә».

**ИЛ-ҺЫУ** *и. йыйн.* Тыуған ил, тыуып үҫкән ер. *Тарауыл ҡарт Һәүбәндән .. ил-һыу именлеген һорашҡан.* «Аҡбуҙат».

**ИЛӘ** *бәйл. иҫк. кит. кар.* **менән.** *Дәүләт илә тулды ғәләм, зиннәт илә ер йөҙө.* Ғ. Соҡорой.

**ИЛӘЙМӘН** *и. иҫк.* Ил башлығы.

**ИЛӘК** *и.* **1.** Он, ашлыҡ һ. б. таҙартыу өсөн ваҡ селтәр менән төпләп, тирәсләп эшләнгән ҡорамал. *Еҙ иләк. Ҡыл иләк. Ваҡ иләк. Эре иләк. Йүкә иләк.*

**2.** Төрлө нәмәнең сүп-сарын, эре-тороһон айыра торған селтәр йәйләнмә. *Тимер иләк. Машина иләге. Ком иләге.*

♦ **Ил ауыҙына иләк ҡаплап булмай** күмәк кешене нимәлер һөйләүҙән тыйып булмай, тигән мәғәнәлә әйтелә. **Иләк аҫты** ашлыҡ иләгәндә үтә төшкән ҡырлыҡ, мысай кеүек ҡый. **Иләк ауыҙ** ауыҙында һүҙ тормаған кешегә әйтелә. **Иләк менән һыу ташыу** буш эш менән булыу. **Иләк өҫтө** ашлыҡ иләгәндә өҫкә ҡалҡҡан эре-торо ҡый. **Иләктән силәккә** *йәки* **силәктән иләккә [бушатыу]** файҙаһыҙ эш менән булыу. **[Аҡсаның] иләк яғы** көмөш-баҡыр аҡсаның баһаһы күрһәтелгән тамғалы, оттора торған яғы.

**ИЛӘКЛӘНЕҮ** *к. төш. кар.* **иләкләү.** *Иләкләнеп бөтөү.*

**ИЛӘКЛӘҮ** *к.* Тишкеләү. *Иләкләп бөтөү.* ■ *Фронттан имен ҡайттым. Тәнде тимерҙәр иләкләһә лә, йәнде ала алманылар.* Ә. Ихсан. *Ауылға ҡайтҡайным .. салбарҙың тубыҡ баштарын, төптәрен иләкләп килдем.* С. Агиш.

**ИЛӘКСЕ** *и.* Иләк яһаусы.

**ИЛӘМ** *и. иҫк.* Матурлыҡ, йәм.

**ИЛӘМҺЕҘ** *с.* Күңелгә ятҡыһыҙ, шөкәтһеҙ, йәмһеҙ. *Иләмһеҙ тауыш. Иләмһеҙ булыу.* ■ [*Хәлфә*] *йәмһеҙ, иләмһеҙ ҡарт ине, сапҡыларға, туҡмарға йомарт ине.* С. Ҡудаш.

**ИЛӘМҺЕРӘТЕҮ** *к.* Иләҫ-миләҫ итеү. *Төнгө тауыш иләмһерәтте.*

**ИЛӘМҺЕРӘҮ** *к.* Иләҫ-миләҫ булып, иҫ үҙгәреү. *Иләмһерәп китеү.*

**ИЛӘН** *бәйл. иҫк. кит. кар.* **менән.**

**ИЛӘНГЕ** *и. диал.* Ләңге.

**ИЛӘНЕҮ** [1] *к. төш. кар.* **иләү** [1]. *Эре иләк менән иләнгән он.*

**ИЛӘНЕҮ** [2] *к. төш. кар.* **иләү** [2]. *Көн буйына байтаҡ йөн иләнде.*

● *Иләнмәгән, һуғылмаған, ҡайным һиңә бер ыштан* (аҙағы нисек булырын белмәйенсә, алдан вәғәҙә биргәндә әйтелгән әйтем).

**ИЛӘНЕҮ** [3] *к. төш. кар.* **иләү** [3]. *Тунға тип тире иләнгән, ләкин әле буялмаған.*

**ИЛӘҪ** *с.* Йәшлек тойғоһо менән болоҡһоған, елкенеп торған. *Яҙ көнө йөрәктәр иләҫ була.* А. Карнай. *Иләҫ күңелле ҡыҙ баланың батыр ҙа булыр һөйгәне.* «Алпамыша».

**ИЛӘҪЛӘНДЕРЕҮ** *к. йөкм. кар.* **иләҫләнеү.** *Ҡарттың маҡтауы мине иләҫләндерә, үҙемдең шағир булғым килә башлай.* Б. Бикбай.

**ИЛӘҪЛӘНЕҮ** *к.* **1.** Төрлө тойғо менән болоҡһоу, елкенеү. *Әклимәнең күңеле һәр саҡ иләҫләнеп тора.* Ф. Иҫәнғолов.

**2.** Иҫ-аң томаланыу, миңгерәүләнеү, аңғыра һымаҡ булыу. *Яңы ғына ойоп китҡән... Хөпъямал, һаташҡан кеше кеүек, иләҫләнеп уянды.* С. Агиш.

**ИЛӘҪ-МИЛӘҪ** *с.* **1.** Тиҙ генә үҙгәреүсән (уй-тойғоға ҡарата). *Иләҫ-миләҫ булыу.* ■ *Иләҫ-миләҫ күңелең кемдә генә, һылыуым.* М. Илбаев. [*Рамазан:*] *Күңелгә иләҫ-миләҫ уйҙар килә. Сара менән бергә йөрөгөм, күңел аҫҡым килеп китә.* Н. Мусин. // *Иләҫ-миләҫ килә йәш йөрәгем, ни күрәһеләрем бар икән.* Х. Ибраһимов.

**2.** Инәле-сығалы, килделе-киттеле (иҫ-аңға ҡарата). *Иләҫ-миләҫ йоҡо.* // *Иләҫ-миләҫ йоҡлау.*

**3.** Күренер-күренмәҫ. *Иләҫ-миләҫ шәүлә.* ■ *Иләҫ-миләҫ итҡән бер ҡараҫҡы күренде.* «Ҡуҙыйкүрпәс менән Маянһылыу».

**ИЛӘҪ-ЯЛАҪ** *с. һөйл.* Күренер-күренмәҫ, ялп-йолп. *Иләҫ-ялаҫ итеп ҡалыу.*

**ИЛӘТЕҮ** [1] *к. йөкм. кар.* **иләү** [1].

**ИЛӘТЕҮ** [2] *к. йөкм. кар.* **иләү** [2].

**ИЛӘТЕҮ** [3] *к. йөкм. кар.* **иләү** [3].

**ИЛӘТӘН** *и. диал.* Һирәк һуғылған тауар; әрмәк.

**ИЛӘҮ** [1] *к.* **1.** Иләк аша үткәреп, сүп-сарҙан, эре-торонан таҙартыу. *Он иләү. Ҡом иләү.* ■ [*Тимергәле — Үмәргә:*] *Юҡ, корҙаш, яманлау ҡайҙа ул. Әле ана Ныязғолға бойҙай иләп йөрөп һуңға ҡалып киттем.* Һ. Дәүләтшина.

**2.** *кусм. һөйл.* Ҡаҡҡылап һуҡҡылау, дөмбәҫләү. *Беҙҙең алғы линияны еңел снарядтар иләп алды.* Д. Юлтый.

**ИЛӘҮ** [2] *к.* Йөн, киндер һ. б. орсоҡ ярҙамында ишеп еп итеү. *Дебет иләү. Еп иләү. Етен иләү. Йөн иләү.* ■ *Бабай һунарға йөрөгән, әбей орсоҡ иләп, киндер һуҡҡан* (Әкиәттән). *Ҡолғаларға бәйләп йөн иләйем, әллә ниңә йөндәрем ырамай* (Халыҡ йырынан).

**ИЛӘҮ** [3] *к.* **1.** Сей тирене махсус юл менән эшкәртеү. *Күн иләү. Тире иләү.*

**2.** *күсм.* Күп тотоноп, кейеп әрһеҙләү, таушалдырыу, туҙҙырыу.

**ИЛӘҮ** [4] *и. иҫк.* **1.** Бер йәмғиәт рәүешендәге төркөм; ырыу. *Табын иләүе. Әйле иләүе.* ■ *Бәне уран иләүенә, Уртауыл тигән ауылға алдырҙылар.* «Батыршаның хаты».

**2.** Бәләкәй административ-территориаль берәмек; волость. **Иләү ағаһы** 1) ырыу башлығы; 2) волость башлығы.

**ИЛӘҮ** [5] *и.* **1.** (*йәки* **ҡырмыҫҡа иләүе)** Төрлө сүп-сар, ағас, тупраҡ һ. б. өйөп эшләгән ҡырмыҫҡа ояһы. *[Айыу] бер ҡулы менән ҡырмыҫҡа иләүен аҡтара биреп ҡуя ла көтөп тора.* С. Кулибай. **Ҡырмыҫҡа иләүе һымаҡ** ҡайнап торған күмәк халыҡҡа әйтелә.

**2.** *диал.* Эркеү, күс. *Балыҡ иләүе. Ҡорт иләүе.*

♦ **Ҡырмыҫҡа иләүенә таяҡ тығыу** *ҡар.* **ҡырмыҫҡа.**

**ИЛӘҮ** [6] *с.* Ҡапыл ярһып, ҡыҙып китеүсән; сыҙамһыҙ. *Иләү ат. Иләү кеше.*

**ИЛӘҮЕРӘҮ** *к. диал.* Иләүһерәү.

**ИЛӘҮЛӘҮ** *к.* **1.** Тертләп ҡапыл тулап китеү (атҡа ҡарата); биленләү. *Атым иләүләп китеп, тапай яҙҙы.*

**2.** *ҡар.* **иләүһерәү** 1. *Иләүләп уяныу.*

**3.** *диал. ҡар.* **илереү** 1. *Иләүләп йөрөү.*

**ИЛӘҮҺЕРӘҮ** *к.* **1.** Йоҡлағанда ҡапыл ҡурҡып, иләҫләнеү. *Иләүһерәп уяныу.*

**2.** *ҡар.* **иләүләү** 1. *Иләүһерәп китеү.*

**ИЛӘШЕҮ** [1] *к. урт. ярҙамл. ҡар.* **иләү** [1]. *Ҡом иләшеү. Он иләшеү.*

**ИЛӘШЕҮ** [2] *к. урт. ярҙамл. ҡар.* **иләү** [2]. *Еп иләшеү. Йөн иләшеү.*

**ИЛӘШЕҮ** [3] *к. урт. ярҙамл. ҡар.* **иләү** [3]. *Тире иләшеү.*

**ИМ** *и. иҫк.* **1.** Ырым-хөрәфәтле дауалау сараһы.

**2.** Ауырыуға ҡаршы ҡулланылған сара; дауа.

**3.** *күсм.* Нимәгәлер ирешеү йәки ниндәйҙер хәлдән ҡотолоу сараһы. *Им табыу.* ■ *[Дәүләтбай:] Мырҙағәли бай һеҙҙе ҡайғыртмай, ул үҙенең ауыртҡан еренә им эҙләй.* Б. Хәсән.

□ **Им итеү** дауалау.

♦ **Им булыу** һабаҡ, аҡыл булыу. *Ҡабат шаярмаҫҡа им булған.* **Именә биреү** кешене әрләү, кәрәген биреү. *[Аҡназар:] Тотоп алып именә бирәйем әле мин уның.* Ғ. Дәүләтшин. **Им өсөн дә [юҡ]** бер кәрәк нәмә әҙ генә лә булмағанда әйтелә. *Крандан им өсөн бер тамсы һыу таммай.* **Им түгел** яраған эш түгел, килешмәй тигән мәғәнәлә әйтелә. *Ҡарға көйө, һандуғас мин, тип йөрөү ул им түгел.* Ш. Бабич.

● *Имгә ҡалған имгәкләп йөрөгән.* Мәҡәл. *Һәр ауырыуҙың үҙ име бар.* Мәҡәл. *Яргәнатҡа көн юҡ, ямаңға им юҡ.* Мәҡәл.

**ИМАҠ** *с. диал.* Ахмаҡ.

**ИМАЛЛЫҠ** *и.* Сумар өйрәктәр ғаиләһенә ҡараған ала төҫтәге ваҡ ҡыр өйрәге (күберәк төньякта оялай).

**ИМАМ** [*ғәр.*] *и.* **1.** Мәсеттә намаҙ уҡытҡан мулла; мәхәллә муллаһы. *Аҙан әйтеп, ҡамәт төшөрҙөләр, мин тик аягүрә ҡалҡманым; имам ҡолаҡ ҡаҡҡан ваҡытта ла, ҡул күтәреп ҡолаҡ ҡаҡманым.* М. Ғафури. **Имам тороу** имам булып, үҙенә эйәртеп намаҙ уҡыу. **Имам хатип** йома, ғәйет намаҙҙарын уҡытыу хоҡуғына эйә булған мулла. **Имам хатип мөғәллим (***йәки* **мөдәррис)** мәҙрәсәлә шәкерттәр уҡытыу хоҡуғы алған мулла.

**2.** Ҡайһы бер мосолман илдәрендәге дин һәм дәүләт башлығы.

**3.** *иҫк.* Фекере нигеҙ итеп алынырлыҡ ғалим.

**4.** *тар.* (*баш хәреф менән*) Ир-ат исеме.

♦ **Имамға ойоу** намаҙҙың бер өлөшөндә ҡулдарҙы ҡаушырып, башты эйәү.

**ИМАМАТ** [*ғәр.*] *и. тар.* **1.** Дини етәкселек.

**2.** Башында имам торған дәүләт.

**ИМАН** [*ғәр.*] *и.* **1.** *дини* Ислам диненә булған ышаныс. *[Дәрүиш:] Кешеләргә иман таратып үҙем хәҙер иманһыҙ ҡалдым.* М. Кәрим. / Ислам диненең асылын тәшкил иткән тәғлимәт. *[Әсәһе — ҡыҙына:] Балам, һин хәҙер ҙур ҡыҙ булып киләһең инде .. Урамда уйнап йөрөргә ярамай, абыстайға барып һабаҡ уҡы, иман өйрән, дин таны.* И. Көҫәпҡол. / Ислам диненә инанғанды белдергән доға һүҙҙәре. *Көйлө иман. Иман уҡыу.* ■ *Кемдер шунда әкрен генә иман кәлимәләрен уҡырға кереште.* М. Ғафури. **Иман шарты** ислам динене асылы яҙылған китап. *Хоҙа кисерер, тигән менән эш бөтмәйҙәр, иман шартын өйрәнмәһә Иван тигән.* Аҡмулла. **Иманым камил** 1) ышанысым ныҡ. *Уның [был ирҙең] көнсөл кеше икәнлегенә иманым камил ине.* Д. Юлтый; 2) һүҙҙе, антты, вәғәҙәне нығытыу өсөн әйтелә. *[Сәхипъямал:] Иртән торғанда ла, кис ятҡанда ла уға [Әптрәхимгә] табынып инем. Иманым камил, валлаһи, шулай итер инем.* Х. Ғиләжев. **Иман килтереү** 1) ислам динен ҡабул итеү; 2) ниҙеңдер дөрөҫлөгөнә бик ныҡ ышаныу. *Ул [Хәлкәй] театрҙы зыялы кешеләр генә ҡарай белә, .. тип иман килтергән ине.* Д. Юлтый.

**2.** Ныҡлы, ҙур ышаныс. *Күҙҙәремдә балҡый хаҡлыҡ нуры, күкрәгемдә таҙа, ныҡ иман.* Д. Юлтый.

♦ **Иманын уҡытыу** тейешле яза биреү; кәрәген биреү, аҡылға ултыртыу. *[Юлай:] Йә әле, бер көнгө эше өсөн иманын уҡытайыҡ.* И. Ғиззәтуллин. **Иманыңды уҡы (***йәки* **ятла)** янап, ҡурҡытып әйтелә. **Иманы юлдаш булһын** үлгән кешегә теләк һүҙе итеп әйтелә. *[Тимергәле:] Бик ир егет ине мәрхүмең. Иманы юлдаш булһын.* Һ. Дәүләтшина.

**ИМАНА** *и. тар.* **1.** Ер бүлгәндә иҫәпкә инеп, ерҙән өлөш алған йән башы; душ. *[Әхмәҙи:] Быйыл, бойорған булһа, үҙемдең иманаларҙың барыһына ла үҙем сәсәм.* А. Таһиров. / Шул йән башына тейгән ер. *Имана пайы.*

**2.** Ерҙән өлөшө булған йән башынан алына торған һалым. *Имана түләү.* ■ *Ҡаты килгәс имана, йомшарған бит иман да* (Бәйеттән).

**ИМАНЛЫ** *с. дини* Ислам динен тоткан; динле.

♦ **Иманлы бүрек** *мыҫк.* дин кешеләре кейә торған бүрек. *[Мулланың] өҫтөндә куй йөнөнән һугып эшләнгән бишмәт, башында иманлы бүрек.* Ғ. Хәйри.

**ИМАНҺЫҘ** *с.* **1.** Ислам динен тотмаған; динһеҙ.

**2.** *күсм.* Оят-намыҫын юғалтҡан; оятһыҙ, намыҫһыҙ. *Иманһыҙ әҙәм. // Аумаҡайҙар, эштә иманһыҙҙар буталмаһын урта юлдарҙа.* Д. Юлтый. / Әрләгәндә әйтелә.— *Укытырмын мин һине, иманһыҙ!* Т. Хәйбуллин.

**3.** *р. мәғ. һөйл.* Сиктән, ғәҙәттән тыш, саманан артыҡ. *[Һатыусы:] Якшы костюм, .. хаҡы ла иманһыҙ [ҡыйбат] түгел.* Б. Бикбай. *Ҡыҙ башта егеттең рус һүҙҙәрен иманһыҙ рәүештә ватып-емереп һөйләүенән тәгәрләп көлдө.* Ғ. Әмири.

**ИМБИ́РЬ** [*рус.*] *и.* **1.** Тамыры эфир майына бай булған күп йыллыҡ тропик үҫемлек. *Имбирь япрағы.*

**2.** Шул үҫемлектең тамырынан алынған тәмле нәмә.

**ИМГЕС** *и. һөйл.* **1.** Төрлө йән эйәләренең эсендә була торған паразит селәүсән. *Бауыр имгесе.*

**2.** Шул паразиттарҙың тәнгә йәбешеп ҡан, һүл һура торған ауыҙы.

**ИМГӘК** *и.* **1.** Бәлә, михнәт. *Имгәк булыу.*

**2.** Артыҡ ыҙа килтергән, мәшәҡәтле кеше йәки мал. ■ *[Солтан:] Отрядка ҡыҙҙарҙы алмайыҡ, .. имгәк кенә булырҙар.* Ш. Бикҡол. / Әрләгәндә әйтелә. *Эй, уга шунда мәләктәр ҡундыра: «Кит, тәкәббер, кит, ләгин, имгәк!» — тиҙәр.* Ш. Бабич.

**3.** Ниндәй ҙә булһа берәй ағзаһы имгәнгән ғәрип кеше. / *с. мәғ.* Зәғиф, ғәрип.

**4.** *иҫк.* Эш, хеҙмәт. *Беҙ ҡаҙарбыҙ ер шарына эшселәрҙең имгәк тыуын.* Х. Ғәбитов.

♦ **Аяҡлы имгәк** (*йәки* **әҙәм имгәге**) мәшәҡәтле, ыҙалы кешегә ҡәнәғәтһеҙлек белдереп әйтелә. **Аяҡ-ҡулың имгәкһеҙ булһын** кешегә һаулыҡ, именлек теләп әйтелгән теләк һүҙе.

● *Ирем үлгәс, иргә барҙым — имгәк алдым.* Әйтем.

**ИМГӘКЛӘНЕҮ** *ҡ. иҫк.* Көс-тир түгеп эшләү. *[Юлдыкай:] Мал-монаят, донъя уларҙыҡы түгел! Ул малдарҙы имгәкләнеп беҙ таптыҡ!* Х. Ғәбитов.

**ИМГӘКЛӘТЕҮ** *ҡ.* Имгәкләп йөрөргә мөмкинлек биреү, имгәкләп хәрәкәт иттереү. *Баланы имгәкләтеү. Имгәкләтеп өйгә индереү.* ■ *Бер һалдат менән Новиков мине култыҡлап, имгәкләтеп ҡанау буйынан алып киттеләр. Аяҡҡа баҫырга тырышам, улар баҫмайҙар.* Д. Юлтый.

**ИМГӘКЛӘҮ** *ҡ.* Ике ҡул менән таянып, дүрт тағанлап йөрөү. *Имгәкләп йөрөү.* ■ *Сыга ир бала ҡурага имгәкләп тупһа аша.* М. Кәрим. *Тыуган илкәйемә ҡайтыр инем, аяктарым талһа ла имгәкләп* (Халыҡ йырынан).

**ИМГӘКСЕ** *и. иҫк.* Эшсе, хеҙмәтсән.

**ИМГӘНЕҮ** *ҡ.* **1.** Берәр ағза һынып, сығып һ. б. сәбәптән зәғифләнеү. *Йығылып имгәнеү. Аяҡ имгәнеү. Ҡул имгәнеү. Имгәнеп ятыу.* ■ *[Бибисарага — Бибеш:] — Инәй, аяҡ аҫты ҡараңғы, иплэп кенә бар. Йығылып, имгәнеп ҡуйма.* З. Бишева.

**2.** Ауыр эш һ. б. сәбәптән сәләмәтлекте юғалтыу. *Ауыр эштән имгәнеү.* / *күсм.* Ҡыйрап, емерелеп зыянланыу. *Борсаҡ һугып, бойҙай имгәнгән.*

**ИМГӘТЕҮ** *ҡ.* **1.** Берәр ағзаны ғәриплэндереү, зәғифләү. *Һәүбән был өйрәкте тере көйө алырга уйлап, уғы менән ҡанатын имгәткән, ти.* «Аҡбуҙат»..

**2.** Кешенең йәки малдың ауыр эш һ. б. сәбәп менән сәләмәтлеген алыу. *[Ҡорбандың әсәһе:] Йәш көйө ҡулынан килмәгән эштәргә ҡушып, имгәтеп бөтөрөрҙәр инде.* С. Ҡудаш.

**3.** *күсм.* Ҡыйратып, емереп, зыян килтереү. *Һугыш бик үк имгәтмәгән урындарҙа .. мал көтөүҙәре күренгеләй.* Д. Исламов.

**ИМДЕ** *ҡ. иҫк. ҡар.* **инде** [2] 2 (боронғо шиғыр аҙағына йәки бәйеттәрҙең юл аҙағына ҡушыла). *Эй, туғандар, бер мәслихәт башлайыҡ имде, аҡтыҡ һүҙем: наҙанлыҡты ташлайыҡ имде* (Бәйеттән).

**ИМЕҘГЕС** *и. диал.* Имеҙлек.

**ИМЕҘЕКЛЕ** *с.* Бала имеҙгән, имсәк балалы. *Имеҙекле ҡатын.*

**ИМЕҘЕҮ** *ҡ.* Имсәк һөтөн һурҙырыу; имсәк биреү. *Бала имеҙеү.* ■ *Тау үҫерендә бер ҡола бейә .. ҡолонон имеҙеп тора.* Ш. Шәһәр. *[Заятүләк:] Төн йоҡоһон өс бүлеп, күкрәк һөтөн имеҙгән әсәйем бар өйөмдә.* «Заятүләк менән Һыуһылыу». / Ҡолон, быҙау, бәрәсте инәһенә ҡушыу. *Быҙауҙы имеҙеү.*

♦ **Имеҙеп һауыу** һыйырҙы быҙауына ҡушып һауыу.

**ИМЕҘЕҮСЕЛӘР** *и.* Балаларын һөт имеҙеп аҫраған умыртҡалы хайуандар; һөтимәрҙәр.

**ИМЕҘЛЕК** *и.* Йәш балаға имеҙеү өсөн имсәк һымаҡ итеп эшләнгән нәмә. *Резинка имеҙлек.* ■ *Хәлимә .. икмәк сәйнәп төйгән сепрәк имеҙлекте төкөрөк менән .. ебетеп, бәпесенең ауыҙына ҡаптыр[ҙы].* Һ. Дәүләтшина.

**ИМЕҘӘК** *с.* Имеүен әле ташламаған; имгән. *Имеҙәк бала. Имеҙәк быҙау.*

**ИМЕЙ** *и. бал. ҡар.* **имсәк** 1.

**ИМЕК** *и. иҫк. ҡар.* **имсәк** 1,2.

● *Имә белһәң — имек, кимерә белһәң — кимек.* Мәҡәл.

**ИМЕН** [*ғәр.*] *с.* **1.** Бәлә-ҡазанан азат, тыныс; һуғышһыҙ. *Имен ил.* ■ *Ир-егеттәр йылгыр йылгаларҙан, горур — тауҙан, сабыр — даланан, яуҙар сапҡан саҡта улар яман, имен заманала — уҙаман.* М. Басыров.

**2.** *р. мәғ.* Иҫән-һау, зыянһыҙ, хәүеф-хәтәрһеҙ, сәләмәт. *Имен йөрөп ҡайтыу. Имен тороу.* ■ *[Ҡырҡылмай] имен ҡалған агастар араһына төпкәрәк ингән һайын тәбигәттең матурлыгына һокланып бөтә алмайһың.* Я. Хамматов.

● *Якшы әҙәм йорт көтһә, йорто имен көтөләр, яман әҙәм йорт көтһә, йортон-илен бөтөрөр.* Мәҡәл.

**ИМЕН-АМАН** [*ғәр.*] *с. йыйн.* Бәлә-ҡазаһыҙ, зыян-зарарһыҙ; һау-сәләмәт; имен-һау. *// Имен-аман тороу. Имен-аман ҡайтыу.*

■ *Донъялар имен-аман саҡ. Ярга имен-аман барып етә алырҙармы?* Н. Мусин.

**ИМЕ́НИЕ** [*рус.*] *и. тар.* Помещик биләгән ер; баяр утары; биләмә.

**ИМЕНЛЕК** *и.* **1.** Бәлә-ҡазаһыҙ, хәүеф-хәтәрһеҙ, талаш-һуғышһыҙ тыныс хәл. *Гел именлек булһа был донъяла, кемгә шифа түгел саф һауа.* С. Кулибай. *Һалдат! Һалдат!.. Ватан ҡайҙа ҡушһа, ул шул ерҙә именлеген һаҡлай тормоштоң.* А. Игебаев.

**2.** Хәүефһеҙлек йәһәтенән закон һағындағы хәл. *Дипломатик именлек. Шәхси именлек.* ■ *Башҡорт АССР-ы илдең именлеген һәм оборона һәләтлеген тәьмин итеүҙә, СССР Ҡораллы Көстәрен кәрәкле бөтә нәмә менән тәьмин итеүҙә ҡатнаша.* Башҡорт АССР-ының Конституцияһы, 1984.

**ИМЕНЛӘНЕҮ** *ҡ.* Төрлө бәлә-ҡаза, һуғыш-ҡырылыш бөтөп, тынысҡа әйләнеү; тынысланыу. *Донъя именләнде.* ■ *Һуғыштар бөткәс, ил именләнгәс, атайым үҙенең рус белештәренән .. Иван ағай тураһында һорашып ҡараны.* С. Кулибай.

**ИМЕНСЕЛЕК** *и. ҡар.* **имеилек.**

**ИМЕН-ҺАУ** *с. ҡар.* **имен-аман.** *[Сәрби:] Эй-й, ҡоҙағый! Әйҙүк, түргә үҙ. [Үлмәҫбикә:] Имен-һау тораһыңмы?* С. Мифтахов.

**ИМЕС** *и.* Бер башҡорт ырыуының исеме.

**ИМЕҮ** *ҡ.* **1.** Тел, ирен ярҙамында имсәктең һөтөн һурыу. *Бала имә. Быҙау имә. Имсәк имеү.* ■ *Һөтөн имгән әсәйеңдең ҡайғынан билен бөктөрмәй, тоткон коштай башкортка әҙер ирек бармы ни?* Салауат Юлаев. / Ниҙеңдер һутын, һүлен һурыу. *[Арыш:] Ерҙең һутын имә-имә быуынға ла ултырам, бер ҡарыш башаҡ сығарып, уға орлоҡ тултырам.* Ф. Мөхәмәтйәнов.

**2.** Ниҙе лә булһа ауыҙға алып һурыу. *Бармаҡ имеү.* / Тел һәм ирендәрҙе хәрәкәтләндереп шәкәр, конфет һымаҡ нәмәләрҙе еботеп ашау. *Конфет имеү.* ■ *Кейеҙбай бик ныҡ йоко баҫҡанда ауыҙына тоҙ киҫәге ҡабып имә, ти* (Әкиәттән).

**3.** *күсм.* Кеше көсөнән файҙаланып, кеше иҫәбенә йәшәү. *Полк штабы Ҡорман ауылын имеп ятҡан Хәйбулла кибетсенең өйөнә урынлашты.* А. Таһиров. *[Талип:] Ата-әсәһе бай ғына күренә. Берәр йыл кейәү булып, шул байлыкты имеп йәшәргә ине бит әле.* Ш. Биҡҡол.

◆ **[Кеше] ҡанын (***йәки* **майын) имеү** кеше көсөн, кеше хаҡын үҙләштереү. *Йыуан корһаклы старшина һәм кулактар, .. фәкир башкорт халҡының майын имеп йыйған малдарын .. бирмәйәсәк.* Ш. Хоҙайбирҙин.

● *Имә белгән ҡолон ике бейәнең һөтөн бөтөргән.* Мәҡәл.

**ИМЕҮСЕЛӘР** *и. ҡар.* **имеҙеүселәр.**

**ИМЕШ** *мөн.* **1.** Кешенән ишеткән хәбәр булып, ысын йәки буш булыуы асыҡ түгел икәнен белдереү өсөн әйтелә. *Имеш, фәлән урындағы тәрән күлдә ҙур йылан йәшәй, ул бер ваҡытта ла кешегә күренмәй.* Т. Баишев.

**2.** Уй-хыялда күҙ алдына килтергән йәки төштә күргән нәмәне һөйләгәндә әйтелә. *Мендәренә әсә баш терәһә, яу осоро инә төшөнә: ә кинйәһен яуға оҙатырға көл икмәге, имеш, бешерә.* С. Кулибай.

**3.** Ниҙең дә булһа дөрөҫлөгөнә шик белдергәндә әйтелә; йәнәһе. *Ниңә һин яңғыҙ ғына бында, туташ? Һа!.. Имеш, ул һыу буйында һал ҡарай.* Ш. Бабич.

**4.** Ни менәндер ҡәнәғәт булмағанды, килешмәгәнде йәки мыҫҡыл белдергәндә әйтелә. *[Гәрәй:] «Атай», «атай», имеш... Ә бына мин һиңә «улым» тип өндәшергә гәрләнәм. Әрәм тамаҡ!* Д. Исламов.— *Тейергә ярамай, имеш! Беҙгә генә тейергә ярамай.* Һ. Дәүләтшина.

**5.** Ниндәйҙер эште аҡылға һыймаҫлыҡ тип иҫәпләгәндә әйтелә. *Егерме биш йыл бергә ғүмер иткәс, әҙәм көлдөрөп айырыл, имеш.* Б. Бикбай.

**6.** Уйламаған ерҙән тегеләй йәки былай булып сыҡҡанын белдереү өсөн әйтелә. *Әҙәм көлкөһө бит! Күмер сыҡҡан ерҙә ягырга күмер юк, имеш.* «Совет Башҡортостаны», 1966, 10 февраль.

◆ **Имеш хәбәр (***йәки* **һүҙ)** кешенән ишетелеп ҡалған, дөрөҫлөгө асыҡ булмаған хәбәр. *Ул ауылдың беҙҙекеләр тарафынан алыныуын ишеткән. Шул имеш хәбәргә ышанып, кире ҡайтҡан.* Д. Юлтый.

● *Алтын-көмөш — таш, имеш, алабута — аш, имеш.* Мәҡәл.

**ИМЕШ-МИМЕШ** *и.*, **имеш-мимеш хәбәр** Кеше арҡыры ишетелеп ҡалған төрлө ысынлы-бушлы һүҙ. *Ауылда [Фатима] тураһында имеш-мимештәр бик күп булһа ла, ысын хәлде бер кем дә белмәгән.* С. Ҡудаш.

**ИМЕШТЕР** *мөн. ҡар.* **имеш** 1—4 (һөйләмдең башында йәки уртаһында ҡулланыла).

**ИМЗА** [*ғәр.*] *и.* Кешенең үҙ шәхесен белдереп ҡуйған тамғаһы; ҡултамға. *Имзаһы бар. Имза ҡуйыу. Имзаны раҫлау. Имза һалыу.*

□ **Имза итеү** *иҫк.* ҡул ҡуйыу, ҡултамға һалыу. *[Алпауыттар] ерең алмаҫ булып вәгәҙә ҡылырҙар, беҙҙең эшкә лә имза ит тиерҙәр* (Бәйеттән).

**ИМЗАЛАНЫУ** *ҡ. төш. ҡар.* **имзалау.** *Эштәр үҙ юлы менән дауам итте, «Ташбулатов» тип имзаланған чектар банкыға ҡарай ага торҙо.* И. Насыри.

**ИМЗАЛАУ** *ҡ.* Ҡул ҡуйыу, ҡултамға һалыу. *Ғаризаны имзалау.*

**ИМЗАЛЫ** *с.* Ҡул ҡуйылған, ҡултамға һалынған. *Имзалы ҡағыҙ.*

**ИМЗАҺЫҘ** *с.* Ҡул ҡуйылмаған, имза һалынмаған. **Имзаһыҙ хат** авторы ҡуйылмаған хат; аноним хат.

**ИМИТА́ЦИЯ** [*рус.* ⟨ *лат.*] *и. кит.* **1.** Тауыштың, ҡыланыштың икенсе берәүҙекенә оҡшатылышы. *Имитация яһау.*

**2.** Бер нәмәнең икенсе бер сифатлы нәмәгә оҡшатып эшләнеше. *Мәрмәрҙең имитацияһы. Алтындың имитацияһы.*

**ИМИТАЦИЯЛАУ** *ҡ. кит.* **1.** Тауышты, ҡыланышты кемгәлер йәки нимәгәлер оҡшатыу. *Һандуғас тауышын имитациялау.* ■ *Ул [повар] пограничниктың кыш һалкынындағы постағы хәрәкәтен имитациялап арлы-бирле кыҙыу йөрөштөрөп алды.* С. Кулибай.

**2.** Бер нәмәне икенсе сифатлы нәмәгә оҡшатып яһау. *Алтынды имитациялау.*

**ИМКАН** [*ғәр.*] *и. иҫк.* Мөмкинлек. *Имкан биреү.* ■ *Граждандар һугышы һәм аслыҡ .. какшауҙар .. Башкортостанға бирелгән хокуктар менән файҙаланыуға практик имкандар бирмәне.* «Совет Башҡортостанының ун йылы», 1929.

**ИМКАНИӘТ** [*ғәр.*] *и. иҫк. кит.* Уңайлы шарт, мөмкинлек, имкан. *Имканиәт булыу.* ■ *Имка-*

*ниәт майҙанға сығыу менән елкәмдәге бурысты үтәү юлында .. әҫәремде майҙанға куям.* Х. Ғәбитов.

**ИМКӘН** *с. һөйл.* Урын һәм ваҡыт йәһәтенән ҡыҫырыҡһыҙ; иркен. *Имкән булыу.*

**ИМКӘНЛӘҮ** *к. һөйл.* Ашыҡмай, үҙ яйың менән берәй нәмә эшләү. *Имкәнләп ултырып сәй эсеү. Имкәнләп һөйләшеү.*

**ИМЛӘ** [*ғәр.*] *и. иҫк.* **1.** Күнекмә өсөн әйтеп яҙҙырылған яҙма; диктант.

**2.** Дөрөҫ яҙыу ҡағиҙәләре; орфография. *Иҫке имлә. Яңы имлә. Башкорт теленең имләһе.*

☐ **Имлә итеү 1)** әйтеп яҙҙырыу; 2) *күсм.* ниҙер эшләүҙе шарт итеп ҡуйыу; мәжбүр итеү. *Был эште хужалык шарттары имлә итә.*

**ИМЛӘТЕҮ** *к. йөкм. ҡар.* **имләү.**

**ИМЛӘҮ** *к.* **1.** Төрлө ырым-хөрәфәт буйынса дауалау. *Ҡуҙыйкүрпәстең атаһы ауырып китте, ти. Тирә яктағы .. бөтә им-томсоларҙы, бағыусыларҙы килтереп, имләп, бағып карaһалар ҙа, береһе лә ярҙам итә алманы, ти.* «Ҡуҙыйкүрпәс менән Маянһылыу».

**2.** Дауа менән сәләмәтләндереү сараһы күреү; дауалау. *Үлән менән имләү.*

**ИМЛӘҮЕС** *и.* Имләү (1 мәғ.) өсөн файҙаланылған төрлө нәмәләр (өшкөрөлгән тоҙ, төрлө үләндәр, имән бәшмәге, артыш һ. б.).

**ИМЛӘҮСЕ** *и. ҡар.* **имсе.**

**ИММИГРА́НТ** [*рус.* ⟨*лат.*] *и.* Даими тороу өсөн берәй илгә күсеп килгән сит ил кешеһе. *Иммигрант булыу.*

**ИММИГРАНТЛЫҠ** *и.* Иммигрант булған хәл. *Иммигрантлык хокуғы.*

**ИММИГРА́ЦИЯ** [*рус.*] *и.* Бер илдән икенсе илгә даими йәшәргә күсеп килеү (сит ил кешеһенә ҡарата).

**ИММУНИТЕ́Т** [*рус.* ⟨*лат.*] *и.* Организмдың йоғошло ауырыуҙарға һәм ҡайһы бер ағыуҙарға ҡаршы тыумыштан булған йәки барлыҡҡа килгән бирешмәүсәнлеге. *Актив иммунитет. Тыумыштан булған иммунитет. Дауамлы иммунитет. Иммунитет булдырыу.*

**ИММУНОЛО́ГИЯ** [*рус.* ⟨*лат.*] *и.* Организмдың зарарлы тәьҫирҙәргә ҡаршы тора алыуын, йоғошло ауырыуҙарҙан һаҡланыу мөмкинлектәрен өйрәнә торған фән.

**ИММУНОТЕРАПИ́Я** [*рус.*] *и. мед.* Йоғошло ауырыу менән ауырыған кешеләрҙе вакцина йәки сыворотка менән дауалау ысулы.

**ИМПЕРА́ТОР** [*рус.* ⟨*лат.*] *и.* Монархтарға бирелә торған иң юғары титул һәм шул титулды йөрөткән кеше. *Һәр бәндә күрһәне күрмәй калмаҫ, кәрәк солтан булһын, кәрәк император.* Аҡмулла.

**ИМПЕРИАЛИ́ЗМ** [*рус.* ⟨*фр.*] *и.* Капитализмдың эре монополиялар хакимлыҡ иткән, эре капиталистик илдәрҙең үҙ-ара байлыҡ сығанағы һәм сауҙа баҙары өсөн, сит ерҙәрҙе буйһондороу һәм башҡа халыҡтарҙы эксплуатирлау өсөн көрәшеп, донъяны ҡабаттан бүлеү маҡсатында туҡтауһыҙ агрессив һуғыштар асып тора торған иң юғарғы, һуңғы стадияһы.

**ИМПЕРИАЛИ́СТ** [*рус.* ⟨*фр.*] *и.* Империализм политикаһын тотҡан, монополистик капитал вәкиле булған эре капиталист.

**ИМПЕРИАЛИСТИК** *с.* Империализмға мөнәсәбәтле, империализмға хас. *Империалистик илдәр. Империалистик политика. Империалистик һуғыш.*

**ИМПЕ́РИЯ** [*рус.* ⟨*лат.*] *и.* **1.** Башында император торған монархик дәүләт.

**2.** Эре империалистик колониаль дәүләт.

**И́МПОРТ** [*рус.* ⟨*ингл.*] *и.* Илдең сит дәүләттән тауар алыуы; *киреһе* экспорт. *Импорт тауарҙары. Импорт костюмы.*

**ИМПОТЕ́НТ** [*рус.*] *и.* Енеси көсһөҙлөк менән ауырыған кеше.

**ИМПРЕСА́РИО** [*рус.* ⟨*ит.*] *и.* Театр, концерт һ. б. тамашаларҙы ойоштороусы, уның хужалыҡ-финанс эштәрен алып барыусы кеше (капиталистик илдәрҙә).

**ИМПРЕССИОНИ́ЗМ** [*рус.* ⟨*фр.*] *и.* 19 быуат аҙағында 20 быуат башында сәнғәттә (һынлы сәнғәт, әҙәбиәт, музыка һ. б.) барлыҡҡа килгән, художниктың иң нескә субъектив хис-тойғоларын, ваҡытлыса булған кәйефен күрһәтеүгә ҡоролған сәнғәт ағымы.

**ИМПРЕССИОНИ́СТ** [*рус.*] *и.* Импрессионизм яҡлы кеше. *Импрессионист булыу.*

**ИМПРЕССИОНИСТИК** *с.* Импрессионизм методтарына, алымына нигеҙләнгән. *Импрессионистик музыка.*

**ИМПРОВИЗА́ТОР** [*рус.*] *и.* Импровизация оҫтаһы; сәсән.

**ИМПРОВИЗАТОРЛЫҠ** *и.* Импровизация яһауға һәләтлек, импровизация яһау һәләте. *Импровизаторлык һәләте, күрәһең, Рәхилә еңгәгә әсәһенән бирелгәндер. Ул беҙгә лә бик күп әһәмиәтле әҫәрҙәр яҙҙырҙы.* К. Мәргән.

**ИМПРОВИЗА́ЦИЯ** [*рус.*] *и.* Кешенең шиғыр йәки көйҙө бер ыңғай сығара һәм башҡара барыуы. *Импровизация яһау.* ■ *Бабичта импровизация һәләте лә көслө булған. Ул берәй кеше йәки вакиға хаҡында шунда уҡ шиғыр сығара торған булған.* Ә. Харисов.

**2.** Бер үк ваҡытта уйлап сығарыла һәм башҡарыла торған әҫәр (шиғыр, йыр, көй һ. б.). *Уңышлы импровизация.*

**ИМПРОВИЗАЦИЯЛАУ** *к.* Әҫәрҙе (шиғыр, йыр һ. б.) бер үк ваҡытта сығарыу һәм башҡарыу; сәсәнлек итеү. *Оҫта импровизациялау.*

**И́МПУЛЬС** [*рус.* ⟨*лат.*] *и.* **1.** Ҡапыл бер эшкә, хәрәкәткә эткән эске тулҡын.

**2.** *физ.* Есем массаһы менән хәрәкәт уның тиҙлегенең үҙ-ара ҡабатланыуына тиң булған хәрәкәт миҡдары.

◆ **Нервы импульсы** *физиол.* нервы системаһына таралған тулҡын. **Электр импульсы** *эл., радио* электр көсөргәнешенең йәки көсөнөң ҡыҫҡа ваҡытлы үҙгәреше.

**ИМСЕ** *и.* Ырым-хөрәфәт буйынса дауалаусы; имләүсе, им итеүсе. *Имсе әбей.* ■ *Имсе Ғәйни әбей аяғымды бәйләп ҡуйған урап ҡабыҡҡа.* Ғ. Әмири. .. *хан бик ҡаты ауырып китә. Төрлө яктан имселәр саҡырталар. Имселәр .. кот коя, карай, бер ҙә том таба алмайҙар* (Әкиәттән).

**ИМСӘК** *и.* **1.** Ҡатын-ҡыҙҙың күкрәгендә түнәрәкләнеп ҡабарып торған һөт биҙҙәре. *Имсәк башы. Имсәк имеү.*

**2.** Елендең ослайып сыҡҡан имеҙлеге. *Кәзә имсәге. Ҡаты имсәкле һыйыр.*

**3.** *кусм. һөйл.* Сурайып, ослайып сығып торған төрлө нәмә. *Дага имсәге.* ■ *Ҡулымдағы көмөш йөҙөк, куш имсәкле көмөш йөҙөк.* М. Ғафури.

♦ **Бер имсәк** *кар.* **имсәктәш** 1. **Имсәк бала** *кар.* **бала** 1. **Имсәк ташлау** имсәк имеүҙән туҡтау. **Имсәк инә** *кар.* **инә. Имсәк теше** *кар.* **теш** [1]. **Эт имсәге** *һөйл.* ослайып ҡултыҡ аҫтына сыҡҡан шешек, сиҡан.

**ИМСӘКТӘШ** *и.* **1.** Бер әсәне имгән әсәнең үҙ балалары һәм сит балалар (бер-береһенә ҡарата). *Имсәктәш балалар. Бер имсәктәш туған. Имсәктәш туған булыу.* ■ *Ни тигәс тә шул яман: бер имсәктәш туғаның ситкә серен биргәне; батырҙың яңғыҙ ҡалғаны* (Ҡобайырҙан).

**2.** *с. мәг. диал.* Бер әсәнән тыуған, бер туған. *Имсәктәш туған. Имсәктәш булыу. Сафа минең имсәктәш ҡустым.*

**ИМТЕК** *с. диал.* Ауыш. *Буй бысҡының тештәре алга ҡарай имтек була.*

**ИМТЕКЛӘТЕҮ** *к.* Һыйырҙы эйҙереү өсөн быҙауҙан еленде тылҡытыу. *[Ҡатын] быҙауҙан имтекләтеп һыйыр һауҙы.* Ғ. Ибраһимов.

**ИМТЕКЛӘҮ** *к.* Төрткөләп-төрткөләп әҙ-мәҙ имеү (малға ҡарата). *Елен төбөн имтекләргә быҙауҙы ҡушыу.*

**ИМТИХАН** [*ғәр.*] *и.* **1.** Белем кимәлен билдәләү өсөн алынған һорау; һынау. *Имтихандар сессияһы. Ҡабул итеү имтихандары. Имтихан алыу. Имтихан үткәреү.* **Имтихан биреү** (*йәки* **тапшырыу, тотоу**) билдәле бер фән, предмет буйынса уҡытыусы, комиссия һ. б. ҡуйған талаптарға ҡәнәғәтләнерлек яуап биреү, һынау үтеү.

**2.** *кусм.* Кемдең йәки нимәнең тормошта нимәгәлер булған һәләтен, сифатын билдәләгән һынау. *Имтихан булыу. Имтиханға әйләнеү.* ■ *Башҡорт театрының Мәскәү гастролдәре уңышлы имтихан булды.* Д. Юлтый.

**ИМТИЯЗ** [*ғәр.*] *и. иҫк. кит.* **1.** Бүтән кеше алдындағы өҫтөнлөк.

**2.** Имтиханды бик яҡшы тапшырған өсөн бирелә торған маҡтау ҡағыҙы. *Малай үҙе лә остазының ышанысын аҡланы,.. гел имтияз ғына алыр булды.* Ф. Иҫәнғолов.

**ИМ-ТОМ** *и. йыйн.* Ырым-хөрәфәт буйынса дауалау әмәлдәре. *Был им-томдарҙан һуң Емеш кисен генә түгел, көндөҙ ҙә һаташып, тағы бер аҙ ауырыны.* З. Биишева.

□ **Им-том итеү** төрлө ырым-хөрәфәт буйынса дауалау.

**ИМ-ТОМСО** *и. кар.* **имсе.**

**ИМТӘЛЕҮ** *к. диал.* Интегеү. *Бик ыҙаланып, имтәлеп ята.* М. Ҡулаев.

**ИМҺЕҘ** [1] *с.* **1.** Дауа, им килешмәгән, йүнәлмәй торған, һауыҡтырып булмаған (ауырыуға ҡарата).

**2.** *кусм.* Булдыҡһыҙ, эшкинмәгән. *Имһеҙ кейәү.*

**3.** *кусм.* Мәшәҡәтле, тынысһыҙ. *Имһеҙ бала.*

**ИМҺЕҘ** [2] *р. диал.* Бик, үтә, ныҡ. *Имһеҙ эшләү.* ■ *Бәҙри, оҫта балыҡсы булған кеүек, уҡыуҙа ла имһеҙ тырыша.* У. Кинйәбулатов.

**ИМҺЕҘЛӘНЕҮ** *к. ҡайт. кар.* **имһеҙләү.** *Бала төндәрен йоҡламай имһеҙләнде.*

**ИМҺЕҘЛӘҮ** *к. диал.* Тынысһыҙлау, тынғыһыҙлау.

**ИМШЕТЕҮ** *к.* Әҙ генә йылытыу, йылымыс хәлгә килтереү. *Ҡыҙ арлы-бирле ягып, мунсаны имшеткән дә: «Әбей мунсаға бар»,— тип саҡырған* (Әкиәттән).

**ИМШЕҮ** [1] *к.* Йылы хәлгә килеү, әҙ генә йылыу. *Һыу имшегән. Көн имшей башланы.*

**ИМШЕҮ** [2] *с.* Йылы ғына, йылымыс. *[Әсәһе — улына:] Йә, имшеү генә һыу менән йыуынып ал.* Н. Мусин.

**ИМӘЛТӘ** *и. этн.* Ярлы кешегә ярҙам итеү өсөн кешенән йыйылған мал йәки бүтән нәмә. *Имәлтә йыйыу. Имәлтә биреү.* ■ *Имәлтәһе кәләш әйттергән кешенең яҡындары ҡалым түләү өсөн дә бирә ине.* Т. Морат.

♦ **Имәлтә ҡулдәк** (*йәки* **бишмәт, кәпәс, юрған**) балаға күҙ теймәһен өсөн йәки им өсөн өй беренсә йыйған сепрәк киҫәктәренән ҡорап тегелгән кейем. **Имәлтә таяғы** имәлтәгә ҡорама йыйғанда тотоп йөрөй торған таяҡ (кеше сепрәкте шул таяҡҡа таға).

**ИМӘН** *и.* Бук ағастары ғаиләһенә ҡараған, киртләс эре япраҡлы, сәтләүеге булған ҡаты ағас. *Имән ҡайыры. Имән япрағы. Имән ороһо. Имән сәтләүеге.* **Имән кеүек** *йәки* **имәндәй ныҡ** көс-ҡеүәте ҙур, һаулығы яҡшы, ныҡлы ир-атҡа ҡарата әйтелә. *Алтмышты ҡыуа барһа ла, Әбделҡәбир ағай имән кеүек мыҡты ине.* Ф. Иҫәнғолов.

♦ **Имән бармаҡ** *диал.* **һуҡ бармаҡ.**

● *Ҡайындың түҙын маҡта, имәндең үҙен маҡта.* Мәҡәл.

**ИМӘНДЕРГЕС** *с. кар.* **имәнес.** *Көҙҙөң имәндергес пәрҙәһендәй, урмандарға йәйелә ҡуҡ томан.* Х. Ҡунаҡбай.

**ИМӘНЕС** *с.* **1.** Ҡарап тороуға ҡотһоҙ; шөкәтһеҙ, ерәнес; имәндергес, имәнесле. *Ҡымыҙ тулған һабалай имәнес йыуан ҡорһаҡлы Ҡатил батша килгән, ти.* «Урал батыр».— *Абау, бынауы эт ҡалай имәнес, күҙҙәре ут шикелле янып тора.* М. Тажи.

**2.** Күңелгә шом, ҡурҡыу һалырлыҡ; ҡурҡыныс; имәндергес. *Имәнес тауыш.* ■ *Элек был тирә бигерәк тә имәнес, бигерәк тә ҡуйы ҡара урман булған, ти.* Н. Ҡәрип.

**3.** Тәнгә ҡыйын, сирҡаныс, ытырғаныс; имәндергес, имәнесле. *Көн бик һыуыҡ. Ялангас ҡулды сығарыуы ла имәнес.* Т. Хәйбуллин.

♦ **Әҙәм имәнесе** кеше ерәнерлек, кешенең ҡотон алырлыҡ; ҡурҡытҡыс.

**ИМӘНЕСЛЕ** *с. кар.* **имәнес.** *Башын бөккән байғош ас, ҡыҙғаныс, имәнесле үлем алдында.* Х. Ғәбитов.

**ИМӘНЕҮ** *к.* **1.** Сирҡаныу, ытырғаныу. *Өйрәнгән күҙгә генә Мырҙаш артыҡ ят күренмәй. Тәү күргән кешеләр Мырҙаштың йөҙөнә имәнеп ҡарап тора.* Д. Юлтый.

**2.** Шомланыу, ҡурҡыу. *Залим инде тар төрмәгә имәнеп.* Х. Ғәбитов.

**ИМӘНЛЕК** *и.* Имән ағастары үҫкән ер. *Урал ғына тауҙың биттәрендә япраҡ ярған матур имәнлек* (Халыҡ йырынан).

**ИМӘС** *мөн. иҫк.* Нимәнелер кире ҡағыу, инҡар итеү мәғәнәһен белдерә; түгел. *Мөмкин имәс.*

■ *Кисәге ғилем аҡылға хуп имәстер.* М. Өмөтбаев. *[Карт — халыҡҡа:] Ул килгән аң да имәс, яу ҙа имәс, тағы ла тәгәрләгән тау ҙа имәс.* «Бабсаҡ менән Күсәк».

**ИМӘҮ** *и. диал.* **1.** *кар.* **таяу** [1].

**2.** *күсм.* Таяныс, терәк, ярҙам.

**ИН** *и.* Малдың ҡолағына, ҡош-корттоң тәпәй ярыһына ҡырҡып һалынған тамға; инәү. *Ҡыйыҡ ин. Телек ин. Тишек ин. Ин һалыу.* ■ *[Аҡһаҡ кола:] Һыртымды ярып хур иттең, ҡолағым ярып ин иттең.* «Аҡһаҡ кола».

**ИНАБАТ** [*ғәр.*] *и.* Кемгәлер белдерелгән ышаныс. *Башҡорт халҡы Иван Васильичҡа барып баш һалғанда, был Сурабан инабат өсөн мәзкүр ханға аманатҡа бирелеп, Ҡазан шәһәрендә хан хозурында бер нисә йыл торғас, вафат булған.* «Башҡорт шәжәрәләре», 1960. *[Нәгимә:] Әхмүш алдағас, башҡаларға ни инабат ҡала?* Б. Бикбай. **Инабатты ебәреү** ышанысты аҡламау, ышанысты бөтөрөү.

□ **Инабат итеү (***йәки* **ҡылыу)** ышаныс белдереү, ышанып ҡарау.

**ИНАБАТЛЫ** *с.* **1.** Һүҙендә, вәғәҙәһендә тороусан; ышаныслы. *Инабатлы кеше. Инабатлы булыу.*

**2.** *күсм.* Намыҫлы, әҙәпле. *Токомбаевтары бигерәк тә инабатлы: берәй урынһыҙ һүҙ әйтерме лә, кул үйнатырмы?* Ғ. Ибраһимов.

**ИНАБАТҺЫҘ** *с.* **1.** Һүҙен, вәғәҙәһен боҙоусан; ышаныcһыҙ. *[Абыстай:] Һыналмаған, арҡырың-буйың үлсәнмәгән бер инабатһыҙ кеше түгелһең дә баһа.* Т. Хәйбуллин.

**2.** *күсм.* Намыҫһыҙ, әҙәпһеҙ. *Инабатһыҙ эшкә аяҡ атлама, боҙоҡлоҡто саҡ ҡына ла яҡлама.* А. Игебаев.

**ИНАНДЫРЫУ** *к. йөкм. кар.* **инаныу.**

**ИНАНИАТ** [*ғәр.*] *и. иҫк.* Мин-минлек. *Һәр кемде инаниат аҙаштырҙы, ҡыйшайҙы шул сәбәптән аяҡ баҫыу.* Аҡмулла.

**ИНАН-ҠАНАН: инан-ҡанан ғына** *йәки* **инан-ҡанан булғас** ашығыс эштәр, ығы-зығылар бөтөп, иркенгә ҡалғас. *Иртә менән, инан-ҡанан булғас, Ташбатҡан ауылының ҡарты-йәше Әхмәҙи урамына айыу күрергә килде.* Ж. Кейекбаев. *[Муйылбикә:] Барһаң, барып ҡайт шул. Беҙ бында инан-ҡанан ғына өйҙө һалып алырбыҙ.* Һ. Дәүләтшина.

**ИНАНЫС** *и.* Ныҡлы ышаныс. *Инанысым бар. Инаныс менән.*

**ИНАНЫСЛЫ** *с.* Ныҡ ышаныслы. *Инанызслы кеше.*

**ИНАНЫУ** *к.* Бик ныҡ ышаныу. *Әбей ғүмер буйы инанып килгән аллаһынан ваз кистеме икән ни?* Х. Мохтар.

**ИНВАЛИ́Д** [*рус.* ⟨*фр.*] *и.* Берәй сәбәптән тотош йәки яртылаш эшкә яраҡһыҙ булып ҡалған кеше. *Ватан һуғышы инвалиды. Икенсе группа инвалиды.* ■ *Инвалид ул Өлфәт — аяҡһыҙ, йөрөй алмай ерҙә таяҡһыҙ. Уң аяғы уның ағастан, ғәрипләнеп ҡайтты һуғыштан.* М. Сөндөклө.

**ИНВАЛИДЛЫҠ** *и.* Инвалид хәле, инвалид булған хәл. *Инвалидлыҡ пенсияһы. Инвалидлыҡҡа сығыу.*

**ИНВЕНТАРИЗА́ЦИЯ** [*рус.*] *и.* Хужалыҡтағы нәмәләрҙең исемлеге төҙөлөп, иҫәпкә алыныуы. *Инвентаризация акты. Инвентаризация үткәреү.*

**ИНВЕНТАРИЗАЦИЯЛАНЫУ** *к. төш. кар.* **инвентаризациялау.**

**ИНВЕНТАРИЗАЦИЯЛАУ** *к.* Инвентаризация яһау, инвентаризация үткәреү. *Бөтә хужалыҡ ҡаралтылары йыл аҙағында инвентаризацияланды.*

**ИНВЕНТА́РЬ** [*рус.* ⟨*лат.*] *и.* **1.** Ниҙәндер иҫәбенә ингән йәки ниҙелер тәьмин иткән бөтә нәмә. *Ваҡ инвентарь. Ауыл хужалығы инвентары. Умартасылыҡ инвентары. Спорт инвентары. Инвентарь исемлеге. Инвентарь кенәгәһе.* ■ *Бригадала бары тик бер һабан ремонтланған, ҡалған тағылма инвентарҙар күҙ нисек ултыртылһа, хәҙер ҙә шул хәлдә.* В. Исхаҡов.

**2.** Хужалыҡтағы нәмәләрҙең исемлеге. *Инвентарға индереү. Инвентарь төҙөү. Инвентарь нумеры.*

◆ **Йәнле инвентарь** хужалыҡтағы ат, һыйыр һымаҡ мал. **Йәнһеҙ инвентарь** хужалыҡтағы төрлө ҡорал-ҡорамал, машина, ҡаралты һ. б.

**ИНВЕ́РСИЯ** [*рус.* ⟨*лат.*] *и. лингв., әҙ.* Берәй һүҙҙең йәки һөйләмдең берәй мәғәнәһенә айырым баҫым яһау маҡсатында һөйләмдәге һүҙҙәр тәртибенең үҙгәртелеше. *Инверсия яһау.*

**ИНГАЛЯ́ТОР** [*рус.*] *и.* Ингаляция яһай торған прибор.

**ИНГАЛЯ́ЦИЯ** [*рус.* ⟨*лат.*] *и. мед.* Тын юлын шифалы пар, газ һулатып дауалау ысулы. *Ингаляция яһау.*

**ИНҒЛИЗ** *и.* Великобританияның төп халҡы һәм шул халыҡтың бер кешеһе. *Инглиз ҡатыны. Инглиз теле.*

**ИНГЛИЗСӘ** *р.* Инглиз телендә. *Инглизсә һөйләшеү. Инглизсә уҡыу.* ■ *Әсә тыңлай уны һинд телендә, инглизсә, немец, испанса. Һөйләй әсә: беҙ тыныслыҡ яҡлы, һуғыш булмаһын, ти, һис ҡасан!* К. Кинйәбулатова.

**ИНГУШ** *и.* Чечен-ингуш АССР-ының төп халҡы (Дағстанда йәшәй) һәм шул халыҡтың бер кешеһе. *Ингуш халҡы. Ингуш теле.*

**ИНҒАМ** [*ғәр.*] *и. иҫк. кит.* **1.** Бүләк. *Ураҙ хан Ҡыпсаҡ ырыуын яратыпты, барына инғам, ихсан таратыпты.* «Бабсаҡ менән Күсәк».

**2.** Яҡшылыҡ.

**ИНД** *и.* Америкала борон-борондан йәшәп, уның төп халҡын тәшкил иткән ырыу, ҡәбиләләрҙең дөйөм атамаһы (хәҙерге көндә Көнъяҡ һәм Төнъяҡ Америкала һаҡланған) һәм шул көбиләнең бер кешеһе. *Инд ҡатыны. Инд теле.*

**ИНДЕ** [1] *р.* **1.** Хәҙер, хәҙерге мәлдә.

**2.** Һүҙҙе алдағы, артабанғы дәүергә йүнәлткәндә ҡулланыла. *[Ҡуҙыйкүрпәс:] Инде бараһы юлым алыҫ ҡалмаған икән* (Әкиәттән). *Ҡанаты һынған ҡош кеүек, инде нисек йөрөргә* (Халыҡ йырынан). / Берәр төрлө эш-хәрәкәтте үтәлде тигәндә үтәлмәй ҡалғанын белдергәндә ҡулланыла. *Инде тоттом тигәндә генә улар [мәскәй ҡыҙҙары] балыҡҡа әйләнгән дә, диңгеҙгә төшкән дә киткән* (Әкиәттән).

**ИНДЕ** [2] *киҫ.* **1.** Һүҙ йәки һөйләмдәге фекерҙе айырым бер баҫым менән көсәйтеп, нығытып ҡуя. *[Ҡотлояр:] Инде, ҡарттар, һүҙ көрәштереп эш сығара торған ваҡыт түгел.* Һ. Дәүләтшина. *Инде тоҙ тип, сәй-шәкәр тип, аһ итәләр сайка-*

лып. Ш. Бабич.— *Ҡыскырма, агай, ҡыскырып эш ҡыра алмаҫһың. Хәҙер һин еңелдең инде* (Әкиәттән). / Һорау һөйләмендәге һорауҙы көсәйтә.— *Йә, күрҙегеҙме? — тигән Өйрәнсек һауалы тауыш менән.— Аңланығыҙмы инде?* З. Биишева.

**2.** Өндәү, саҡырыу, бойороу, үтенеүҙе, теләк-маҡсатты һ. б. белдергән һөйләмдәргә йомшаҡлыҡ бирә. *[Новиков:] Ҡыҙҙар эргәһенә баргас, шартына килтерәйек инде.* Д. Юлтый.— *Йә, егет, хәҙер һин әйләнеп йөрөп кил инде* (Әкиәттән). *[Батша:] Бәхетеңә тура килгәс, ярар инде* (Әкиәттән).

♦ **... бит инде** бүленгән хәбәрҙе ялғап алып киткәндә ҡулланыла. *Теге егет һалдат булып кейенеп алғайны бит инде. Кейенгән дә был, киткән батша һарайына* (Әкиәттән). **Бына инде** берәй эш-хәбәргә аптырап ҡалғанда әйтелә. *Бына инде, ул ни тигән эш.* **Йә инде** *ҡар.* **йә** [1] 3. *Йә инде, әйтмәй киткән дә барған.* **Кит инде** аптырау йәки һоҡланыуҙы белдереп әйтелә. *Кит инде, нигә шулай йәмһеҙ ҡылана икән.* **Күр инде** *шул уҡ* **ҡара инде** (*ҡар.* **ҡарау**). **Ҡайҙа инде** *ҡар.* **ҡайҙа. Ҡуй инде** *ҡар.* **ҡуй** [2]. **Ҡара инде** *ҡар.* **ҡарау.**

● *Булмаҫты һөткә һалып ҡайнатһаң да булмаҫ инде.* Әйтем.

**ИНДЕК** *и.*, **индек ҡапҡа** *ҡар.* **инлек** [1].

**ИНДЕКС** [*рус.* ⟨ *лат.*] *и.* **1.** Берәй нәмәнең исемлеге, берәр нәмә тураһындағы белешмә. *Тауарҙар индексы.*

**2.** *эк.* Ниндәйҙер экономик күренештең әҙмәҙлекле үҙгәрә барыуын проценттарҙа сағылдыра торған цифрлы күрһәткес. *Эш хаҡының индексы.*

**3.** *мат.* Математик аңлатмаға ингән, хәрефтең аҫтына төшөрөп ҡуйыла торған һан йәки хәреф билдәһе.

**4.** Нимәнелер билдәләү өсөн хәреф, цифр һ. б. торған шартлы билдәләр системаһы. *Библиотека индексы. Почта индексы.*

**ИНДЕРЕЛЕҮ** *ҡ. төш. ҡар.* **индереү.**

**ИНДЕРЕМ** *с. диал.* Иңле. *Индерем тауар.*

**ИНДЕРЕҮ** *ҡ.* **1.** *йөкм. ҡар.* **инеү** 1—4, 5, 8—11. *Өйгә индереү. Ҡыуып индереү. Саҡырып индереү.* ■ *Иртәнсәк мал-тыуарҙы көтөүгә ҡыуам, аласыҡҡа утын индерәм.* Н. Мусин. *Ҡыҙ ишекте асып, сүлмәкте ҡыуыш эсенә индерҙе* (Әкиәттән). *Егет, бер аҙ йөрөгәс, атты кире һарайға индереп ҡуйған* (Әкиәттән).

**2.** Инергә ыңғай ҡуйыу, инергә мөмкинлек биреү. *Залға индереү.* ■ *Карт тағы килеп ҡыскырған. Тау батыр быны асып индергән* (Әкиәттән).

**3.** Эш-тормошта ниҙе лә булһа ғәмәлләштереү. *Өлөш индереү. Өҫтәмә индереү. Төҙәтмә индереү. Тәртип индереү. Тарҡаулыҡ индереү.* ■ *Атманымы нурлы таң, күкрәккә рәхмәт индереп.* Ш. Бабич.

● *Йылы һөйләһәң, йыланды ла өңөнә индереп була.* Мәҡәл.

**ИНДИВИ́Д** *и. кит. ҡар.* **индиви́дуум.**

**ИНДИВИДУАЛИ́ЗМ** [*рус.* ⟨ *фр.*] *и.* **1.** Буржуаз идеологияның айырым шәхес мәнфәғәтен йәмғиәт мәнфәғәтенән өҫтөн ҡуйған әхләҡи принцибы. *Индивидуализмға ҡаршы булыу.*

**2.** Үҙ шәхесеңде коллективҡа ҡаршы ҡуйып күтәрергә тырышыу теләге һәм шул теләктән килгән ҡылыҡ.

**ИНДИВИДУАЛИ́СТ** [*рус.*] *и.* Ҡылығында, эшендә индивидуализмға урын биргән кеше.

**ИНДИВИДУАЛИСТИК** *с.* Индивидуализм менән һуғарылған, индивидуализмға нигеҙләнгән. *Индивидуалистик ҡараш. Индивидуалистик философия.*

**ИНДИВИДУАЛЛЕК** *и.* Бер шәхескә йәки нәмәгә генә хас булған айырым бер сифат; үҙенсәлек. *Шағир өсөн иң үлемесле нәмә поэтик индивидуаллектән мәхрүм булыу.* Ә. Хәкимов.

**ИНДИВИДУАЛЛӘШТЕРЕҮ** *ҡ.* Үҙенә генә хас, үҙенә генә характерлы, индивидуаль сифаттар буйынса айырып биреү.

**ИНДИВИДУА́ЛЬ** [*рус.* индивидуальный ⟨ *лат.*] *с.* **1.** Бер шәхескә йәки нәмәгә генә хас; айырмалы. *Индивидуаль үҙенсәлектәре. Индивидуаль үҙенсәлеге юҡ.*

**2.** Яңғыҙ кеше ҡарамағында булған; айырым. *Индивидуаль баҡса. Индивидуаль йорт. Индивидуаль хужалыҡ.* ■ *Граждандар файҙаланыуында ярҙамсы хужалыҡты тотоу өсөн (мал һәм ҡош-ҡорт та инә), баҡсасылыҡ һәм йәшелсә үҫтереү, шулай уҡ индивидуаль торлаҡ төҙөү өсөн закон менән билдәләнгән тәртиптә бирелгән ер участкалары булыуы мөмкин.* Башҡорт АССР-ының Конституцияһы, 1984.

**3.** Айырым кеше тарафынан башҡарылған; яңғыҙ. *Индивидуаль заказ.*

**4.** Һәр кешегә йәки нәмәгә айырым ҡағылышлы, үҙенә башҡа тәғәйенләнгән. *Индивидуаль план.* ■ *Эшселәрҙе .. һөнәргә өйрәтеү индивидуаль рәүештә алып барыла.*

**ИНДИВИ́ДУУМ** [*рус.* ⟨ *лат.*] *и. кит.* **1.** Айырым бер йән эйәһе.

**2.** Айырым бер кеше; шәхес.

**И́НДИЙ** [*рус.* ⟨ *лат.*] *и.* Химик элемент, һирәк осрай торған көмөшкә оҡшаш аҡ металл.

**ИНДИКА́ТОР** [*рус.* ⟨ *лат.*] *и.* **1.** *тех.* Ниҙеңдер эшен, хәлен күҙәтеп, күрһәтеп тора торған төрлө прибор. *Радио индикаторы.*

**2.** *хим.* Шыйыҡлыҡта булған химик процесты билдәләү өсөн уға һалына торған матдә. *Индикатор өҫтәү. Индикаторҙар һелте йәки кислота тәьҫирендә төҫөн үҙгәртә.*

**ИНДИКА́ЦИЯ** [*рус.*] *и.* Төрлө аппараттар эшенең күҙәтелеп, билдәләнеп, күрһәтелеп тороушо. *Космонавт пультындағы .. индикация системаһы ярҙамында карабтың бөтә динамик режимы контроль аҫтында тотола.* «Совет Башҡортостаны», 1968, 6 ноябрь.

**ИНДИФФЕРЕНТ** [*рус.* индифферентный ⟨ *лат.*] *с. кит.* Бер нәмә менән ҡыҙыҡһынмаған, вайымһыҙ, ғәмһеҙ. *Индифферент булыу.*

**ИНДОНЕЗИЙ** *и.* Күп төрлө халыҡтар, төрлө ырыу, ҡәбиләләр төркөмөнән торған Индонезияның төп халҡы һәм шул халыҡтың бер кешеһе (телдәре малай-полинезий телдәренең индонезий төркөмөнә ҡарай). *Индонезий халҡы. Индонезий ҡатыны. Индонезий телдәре.*

**ИНДУКТИВ** [*рус.* индуктивный] *с.* Индукцияға (1,2 мәғ.) нигеҙле. *Индуктив метод. Индуктив фекер. Индуктив бәйләнеш.*

**ИНДУ́КТОР** [*рус.* ⟨ *лат.*] *и.* Ҡул менән әйләндереп эшләтә торған электр машинаһы.

**ИНДУ́КЦИЯ** [*рус.* ⟨ *лат.*] *и.* **1.** *лог.* Айырым, осраҡлы фаҡттарҙан һәм положениеларҙан дөйөм һығымта сығара торған фекерләү ысулы; *киреһе дедукция.*

**2.** *физ.* Ниндәй ҙә булһа үткәргесте магнит ҡырында хәрәкәт иттергәндә, ошо үткәргестә электр тогы барлыҡҡа килеү.

**3.** *физиол.* Нервы системаһында ярһыу һәм тотҡарланыу процестарының үҙ-ара бәйләнеше.

**ИНДУСТРИАЛИЗА́ЦИЯ** [*рус.*] *и.* Халыҡ хужалығының бөтә өлкәләрендә эре машина техникаһы булдырыу процесы. *Социалистик индустриализация.*

**ИНДУСТРИАЛЛӘШТЕРЕЛЕҮ** *к. төш. кар.* **индустриалләштереү.** *Индустриалләштерелгән ил.*

**ИНДУСТРИАЛЛӘШТЕРЕҮ** *к.* Индустрия нигеҙенә ҡороу, машина техникаһына күсереү. *Халыҡ хужалығын индустриаллаштереү.*

**ИНДУСТРИАЛЬ** [*рус.* индустриальный] *с.* Индустрияға мөнәсәбәтле, индустрияның үҫешенә мөнәсәбәтле. *Индустриаль ил. Индустриаль төҙөлөш.*

**ИНДУ́СТРИЯ** [*рус.* ⟨ *лат.*] *и.* Машина техникаһына ҡоролған фабрика-завод промышленносы. *Ауыр индустрия. Еңел индустрия. Нефть индустрияһы. Төҙөлөш индустрияһы. Химия индустрияһы.* ■ *Металл кәрәк! Металл булмаһа, индустрия нисек шау итер.* Ғ. Сәләм.

**ИНЕ** *ярҙ. к.* **1.** Ҡатмарлы үткән заман формалары яһай. *Бара ғына инем әй юл менән, юлғынайым китте ҡул менән* (Халыҡ йырынан).

**2.** Төрлө һүҙ төркөмө менән килеп, үткән заман хәбәрлек мәғәнәһе бирә. *Нурға айҙан бай ине лә, уйға айҙан һай ине.* Ш. Бабич. *Урал ҡошҡа мул ине, быңдай ҡоштар юҡ ине.* «Аҡбуҙат».

**3.** Сифат ҡылымдың *-р* формаһы, уртаҡ ҡылымдың *-рға* формаһы, шарт ҡылымдың *-һа* формаһы менән килеп, төрлө теләк-маҡсатты белдерә. *Күгәреп күккә үрелгән ҡарлы башын Уралдың, күҙҙең яуын алырҙай матурлығын ҡырҙарҙың мәңге маҡтар инем мин, мәңге данлар инем мин.* Салауат Юлаев. *Сәй ҡайнатырға ине.* Д. Юлтый. *Һай, Зөлхизә бының сәбәбен аңлаһа ине.* З. Биишева.

**4.** Исем ҡылым менән бирелгән хәбәргә йомшаҡлыҡ мәғәнәһе бирә. *Ғәлимәләргә йомош менән генә инеүем ине.* Ф. Рәхимғолова.

**5.** Шарт һөйләмдән һуң ҡылымдың *-ған, -ә* формалары менән йәки сифат менән килгән хәбәргә бәйләнеп, берәй эш-хәлдең булыуҙан саҡ ҡалғанын белдерә. *Тотмаһам, машина аҫтына инеп китә ине.*

♦ **Белһәң ине** *кар.* **белеү.** *Белһәң ине, миңә шул хәтле ҡыйын.* **Тиер инең** (*йәки* **инем**) төрлө заман формаһы менән килеп, ниҙе лә булһа асыҡлай алмай икеләнеүҙе белдерә. *Балта менән ҡырҡҡандар тиер инең, табы юҡ* (Әкиәттән). **Ярар ине** шарт ҡылым менән килеп, шик-хәүефте белдерә *Был кеше алдамаһа ярар ине.*

**ИНЕРТ** [*рус.* инертный] *с.* **1.** *физ.* Инерцияһы булған.

**2.** *һөйл.* Һүлпән. *Инерт кеше.*

♦ **Инерт газдар** *хим.* химик активлығы түбән булған газдар.

**ИНЕРТЛЫҠ** *и. кит.* Эштә һүлпәнлек, эшкә һалҡын ҡараш; эшмәкәрһеҙлек. *Бөгөн йәнле эш тирәһендә һүҙ буткаһы бешереүгә, инертлыҡҡа, формализмға, моңһоҙлоҡҡа ҡаршы ҡыйыу көрәшеү беренсе дәрәжәләге бурыс булып тора.* «Совет Башҡортостаны», 1986, 27 май.

**ИНЕ́РЦИЯ** [*рус.* ⟨ *лат.*] *и. физ.* Есемден хәрәкәтлек йәки тыныслыҡ хәлен һаҡларға тырышыу үҙенсәлеге.

♦ **Инерция буйынса** (*йәки* **менән**) уйлап тормайынса, аңламаҫтан, механик рәүештә. *Инерция буйынса хәрәкәт итеү. Инерция менән атлау.*

**ИНЕС** *и.* Ҡулдәктең күкрәге менән яурыны тәңгәленә эстән һалынған ҡат. *[Гәрәй] аҡсаның ҙурыраҡтарын ҡулдәгенең алғы инесе араһына һалып, ике яҡлап ҡуша тегә, һиҙелмәйме тип ҡат-ҡат ҡапшап ҡарай.* Б. Бикбай.

**ИНЕСЛӘҮ** *к.* Инес ҡуйыу. *Инеслэп тегеү.*

**ИНЕҮ** *к.* **1.** Хәрәкәт итеп (атлап һ. б.) берәй нәмәнең эсенә үтеү, эсенә әләгеү; кереү. *Инеп китеү. Ишектән инеү. Өйгә инеү. Тыштан инеү. Бер инеп, бер сығып йөрөү.* ■ *Аҡмырҙа .. таш күпер аҫтына инеп ултырған* (Әкиәттән). / Берәй маҡсат менән кемгәлер йәки ҡайҙалыр барыу; кереү. *Ашҡа инеү. Йомошҡа инеү. Сәйгә инеү.* ■ *Ишек алдында бер ҡыҙ ҙа күренмәй, улар дәрескә ингән.* Д. Юлтый. / Билдәле бер сиктең, уртаһы билдәләнгән бер нәмәнең эс яғына үтеү; кереү. *Ауылға инеү. Дошмандың тылына инеү. Майҙанға инеү. Уртаға инеү. Халыҡ араһына инеү. Ҡамыш араһына инеү.* ■ *Ул батша майлы һүҙҙәр менән күп байлыҡтар вәғәҙә итеп, ергә инеп ултырҙы ла, хәҙер меңләгән юҡһылды еренән, һыуынан, майынан мәхрүм итте.* Т. Хәйбуллин. *Ә эт бер нәмәгә ҡарамай урманға инә лә китә* (Әкиәттән). *Илкәйенә ингән яуға ҡаршы ат ҡушаҡлап сапҡан ир яҡшы* (Халыҡ йырынан). / Ниҙеңдер эсенә тотош күмелеү, сумыу, батыу. *Болотҡа инеү. Ҡараңғылыҡҡа инеү.* ■ *Тимер шаптырлап һыуға инеп китте.* Б. Бикбай. / *күсм.* Һиҙеү-тойоу ағзаларына үтеп, тәьҫир яһау. *Ҡолаҡҡа ингән тауыш.* ■ *Был бәлеш, күмәстәрҙең тәмле еҫтәре Айбулаттың танауына килеп инә.* Һ. Дәүләтшина. / *күсм.* Кешенең аҡыл-зиһененә, күңел-хәтеренә үтеп, урын алыу. *Аҡыл инеү. Башҡа инеү. Күңелгә инеү. Фекергә инеү. Хәтергә инеү.* ■ *Ниндәй йылы һүҙ бар икән телдә Әсмә йөрәгенә инерлек!* С. Кулибай. / *күсм.* Эш-хәлдең, берәй мәсьәләнең эсенә үтеү, асылын белеү. *Мин ул тиклем тәрәнгә инмәнем, ул-был хаҡында өндәшмәй, ыңғайыраҡ һыйпаным да ҡуйҙым.* Т. Хәйбуллин.

**2.** Ниҙелер тишеп эскә үтеү; ҡаҙалыу. *Шырау инде.* ■ *[Ямал:] Бәрәкәс, бынауы алабуғаның һырт энәһә бармаҡ битенә инеп китте бит.* М. Тажи.

**3.** Ниндәйҙер йәшәү, дауаланыу һ. б. маҡсат менән ҡайҙалыр урынлашыу. *Өйҙәш булып инеү. Фатирға инеү.* ■ *Әфисәр был ҡыҙҙың йорто эргәһенән генә фатир алып ингән* (Әкиәттән). / Хөкөм ителеп ябылыу. *Төрмәгә инеү.* / Берәр урынға урынлаштырылыу, ҡуйылыу (ашлыҡ, аҡса һ. б. тураһында). *Кассаға ингән аҡса. Ке-*

*ләткә ингән ашлыҡ.* / Урынлашыу, һыйыу (һауыттың һыйышлығына ҡарата). *Шешәгә ярты литр инә.* / *күсм.* Нимәгәләр бағышлап бирелеү, ниҙеңдер файҙаһына китеү. *[Сурағол — байға:] һинең малыңа минең хәләл көсөм ингән.* Т. Хәйбуллин.

**4.** Эш, хеҙмәт, уҡыу һ. б. ҡабул ителеү; урынлашыу. *Уҡырға инеү. Эшкә инеү. Заводка слесарь булып инеү.* ■ *Йөрөй торғас, [Оморҙаҡ] бер байға ялсы булып ингән, ти* (Әкиәттән). / Берәй йәмғиәт һ. б. составына ағза булып ҡабул ителеү, алыныу. *Колхозға инеү. Комсомолға инеү. Партияға инеү. Пайға инеү.* / Дөйөм нәмәнең эсендә бер берәмек булыу. *Йыйынтыҡҡа ингән хикәйә.* ■ *[Айбулат:] Нимә була ул политика, ниндәй ғилемгә инә?* Һ. Дәүләтшина. / Өлөш булып берәй нәмәнең эсендә урын алыу. *Иҫәпкә инеү. Үлсәүгә инеү. Һанға инеү. Исемлеккә инеү.*

**5.** Билдәле бер күренеш, миҙгел араһын һ. б. үтеп, тамамлап, икенсе күренеш, миҙгелгә күсеү (оло йәш, һыуыҡ ваҡыт һ. б. ҡарата ҡулланыла). *Алтмышҡа инеү. Ҡышҡа инеү. Көҙгә инеү.*

**6.** Бер нәмәнең сифаты икенсе нәмәгә йоғоу (буяу тураһында). *Йөнгә буяу яҡшы инә.* ■ *Бирсәткә мандым көрәнгә, көрән матур ингәнгә* (Таҡмаҡтан).

**7.** Үтеү, үткәрелеү (мәҫ. электр, газ, телефон, һыу һ. б.). *Тимер юл инеү.*

**8.** Уҡытыу эшендә билдәле бер фән буйынса дәрес үткәреү, уҡытылыу. *Дүртенсе класта инглиз теле инә.*

**9.** Юғарынан түбәнгә төшөү. *Зөләйха, һин ергә ингән хур ҡыҙы, күҙҙәрең ғүйә төндәге күк йөҙө.* Салауат Юлаев.

**10.** *күсм.* Икенсе бер рәүешкә күсеү. *Ҡатын киәфәтенә инеү. Кеше төҫөнә инеү.* ■ *[Аҡҡужа] артыҡ-бортоҡтарын ҡымтыштырып.., кәҙимге крәҫтиән хәленә инеп алды.* Ғ. Дәүләтшин. *[Ҡыҙ:] Мин әбей ҙә була алам, теләгән бер нәмә һүрәтенә инә алам* (Әкиәттән). / Берәй төҫкә күсеү, билдәле бер төҫ алыу. *Сал инеү. Баҡыр төҫөнә инеү. Күк төҫкә инеү. Ҡара төҫкә инеү.*

**11.** *күсм.* Билдәле бер сифат, хәл булып ғәмәлгә килеү. *Ҡалаға байрам төҫө ингән.* ■ *Диңгеҙ котора. Ә Зөлхизәнең йөҙөнә бер үҙгәреш тә инмәгән. Ул һаман тыныс, бәхетле.* З. Биишева. / Билдәле бер тойғо булып ғәмәлгә килеү.

**12.** Исемдәр менән йәнәшә килеп, нимәнеңдер ныҡлап урын алыуын, ҡабул ителеп китеүен белдерә. *Ғәҙәткә инеү. Модаға инеү.* / Эш-хәрәкәтте белдергән исемдәр менән килеп, шул эш-хәрәкәттең башҡарыла башлауын аңлата. *Бәйләнешкә инеү. Мөнәсәбәткә инеү.* ■ *Улар власты халыҡ ҡулына әҙ биреп, күберәк үҙ ҡулдарына алыр өсөн батша хөкүмәте менән мәслихәткә инергә ашыға.* Һ. Дәүләтшина. *Ир булһаң, кеше ғәйбәтенә инмә.* М. Тажи. *Беҙ һуғышҡа ингәндә бәхилләштек барыбыҙ* (Бәйеттән).

**13.** Берәй сифатты, хәл һ. б. белдергән исем менән килеп, шул сифат, хәл һ. б. барлыҡҡа килеүен, бар булыуын белдерә. *Йән инеү. Көс инеү. Дәрт инеү. Хәл инеү.* ■ *Был эсемлектәрҙең береһе көс индерһә, береһе сығара торған икән* (Әкиәттән).

**14.** Хәл ҡылымдың *-ып* формаһындағы ҡылым менән килеп, ҡушма ҡылым яһай һәм нимәнеңдер эсенә хәрәкәт итеүҙе белдерә. *Алып инеү. Барып инеү. Баҫып инеү. Килеп инеү. Ҡайтып инеү. Үтеп инеү.*

**15.** Хәл ҡылымдың *-ып* формаһы менән ҡушма ҡылым яһап, эш-хәрәкәттең тамамланыуын белдерә. *Инеп китеү. Инеп сығыу. Инеп ултырыу.*

**16.** *диал.* Еүешләнеү һ. б. сәбәптән элекке күләмдән тарайыу, ҡыҫҡарыу, бәләкәйләнеү; ултырыу (кейем-һалымға ҡарата). *Күлдәгем бер йыуыуҙа инде.*

♦ **Ай-һайға инеү** *ҡар.* **ай-һай. Араға инеү** *ҡар.* **ара** [1] 4. **Ауыҙға инерҙәй булыу** *йәки* **ауыҙға инеп барыу** *ҡар.* **ауыҙ. Аяғы инһә, башы инмәгән** яңы ғына урынлашҡан, төпләнеп тә бөтмәгән, тигән мәғәнәлә ҡулланыла. **Инеп килеү** һырлығыу. *Мыяулап, ашҡа төшөрҙәй булып сабып йөрөгән бесәйҙе атайым .. тибеп ебәрҙе, [ә ул] һаман инеп килә.* Ғ. Минһажев. **Йәнгә инеү** *ҡар.* **йән. Инер тишек тапмау** *ҡар.* **тишек** [1]. **Ҡырҡ төргә инеү** *ҡар.* **ҡырҡ. Рәткә инеү** *ҡар.* **рәт** [1] 4. **Әҙәм рәтенә инеү** башҡа кешеләр һымаҡ яҡшы хәлгә күсеү. *Дауаланып әҙәм рәтенә инһәм, эшеңдә булышырмын әле.* Ғ. Әхмәтшин.

● *Ана һөтө менән инмәгән, тана һөтө менән инмәҫ.* Әйтем. *Кеше ҡайғыһы кешегә иртә инә, кис сыға.* Әйтем. *Күршеңә онға инмәһәң дә көлгә инерһең.* Әйтем. *Ҡолаҡтан ингән һалҡын һүҙ йөрәккә барып боҙ була.* Мәҡәл. *Үләне мал һаҙға инер.* Мәҡәл.

**ИНЕШ** [1] *и.* Ер аҫтынан урғылып сығып ағып ятҡан бәләкәй һыу сығанағы, шишмә. *Инеш һыуы.* ■ *Инештең һыуы йәйҙең эҫе көндәрендә лә боҙ кеүек һалҡын була. Беҙ .. инештең көмөштәй таҙа, һалҡын һыуына айран яҙып эсә торғайныҡ.* С. Кулибай.

**ИНЕШ** [2] *и.* Телмәрҙең, яҙма хеҙмәттең йәки музыкаль әҫәрҙең башланғыс өлөшө. // *Инеш бүлек. Инеш өлөш.* ■ *Яңы материалды үтеү, ғәҙәттәгесә, инеш әңгәмә менән башлана.* М. Ғималова. *[Йырсы — Сәйфетдиничкә:] — .. Йырсыға аккомпанировать иткәнең бармы? Инеш өлөшөн көслө итеп бөтөрөп ҡуяһың да, мин башлағас, әкрен генә уйнайһың.* Р. Солтангәрәев.

♦ **Инеш журналы** килгән аҡсаны теркәй торған бухгалтер кенәгәһе. **Инеш һөйләм** *ҡар.* **һөйләм. Инеш һүҙ** *ҡар.* **һүҙ. Инеш һүҙбәйләнеш** *ҡар.* **һүҙбәйләнеш.**

**ИНЕШКӘКЛЕ** *с. диал. ҡар.* **кәрше 1.**

**ИНЖЕ́КТОР** [*рус.* ‹ *фр.*] *и. тех.* Пар һәм газдарҙы ҡыҫа һәм шыйыҡлыҡты төрлө аппарат һәм резервуарҙарға ҡыҫып тултыра һәм саптыртып ағыҙа торған насос.

**ИНЖЕНЕ́Р** [*рус.* ‹ *фр.*] *и.* Юғары техник белеме булған белгес. *Хәрби инженер. Инженер майор. Инженер механик. Инженер экономист.*

**ИНЖЕНЕРЛЫҠ** *и.* Инженер профессияһы, һөнәре. *Инженерлыҡ эше.*

**ИНЖИЛ** [*ғәр.*] *и.* Христиан диненең асылын тәшкил иткән китап. (Ғайса пәйғәмбәрҙең тормошо һәм тәғлимәте тураһындағы хикәйәттәрҙән тора); тәүраттың бер бүлеге. *[Иблис:] Инжилең, көрьәндәреңде таптарым, аҙҙырырмын донъяны, бел, яраббым!* Ш. Бабич.

**ИНЖЙР** [*рус.* 〈*фарс.*] *и.* **1.** Көньяҡта үҫә торған эре киртләс япраҡлы емеш ағасы. *Инжир ағасы.*

**2.** Шул ағастың емеше. *Кипкән инжир. Инжир вареньеһы.*

**ИНИЦИА́Л** [*рус.* 〈*лат.*] *и.* **1.** Исем һәм атаһының исеме йәки исем һәм фамилияның баш хәрефтәре.

**2.** *махс.* Китап, бүлек йәки абзац башындағы ҙур итеп, матурлап яҙылған хәреф.

**ИНИЦИАТИВ** [*рус.* инициативный] *с.* *ҡар.* **инициативалы.**

**ИНИЦИАТИ́ВА** [*рус.* 〈*фр.*] *и.* **1.** Берәй эште башлап ебәреүгә йүнәлтелгән ынтылыш; башланғыс. *Йәштәр инициативаһы менән башлаған ярыш.* / Кемдең дә булһа эштә, тормошта тотҡан етәксе роле. *Инициативаны үҙ ҡулыңа алыу.* ■ *1943 йылдың йәйендә Курск янындағы һуғышта гитлерсы ғәскәрҙәр стратегик инициативаны бөтөнләй юғалтып, оборонаға күсте.* «Совет Башҡортостаны», 1966, 9 май.

**2.** Үҙ белдегең, үҙ тырышлығың менән эш алып барыу һәләте. *Инициатива күрһәтеү.* ■ *Уҡытыу эшендә төрлө метод ҡулланырға мөмкин, ул һәр кемдең үҙ инициативаһына бәйләнгән.* М. Тажи.

**ИНИЦИАТИВАЛЫ** *с.* Үҙ алдына актив эш алып барыуға һәләтле; булдыҡлы, дәртле; инициатив. *Инициативалы эшсе. Инициативалы етәксе.*

**ИНИЦИА́ТОР** [*рус.* 〈*фр.*] *и.* Берәй эшкә башланғыс биреүсе; башлаусы. *Ярыш инициаторы. Инициатор булыу.* ■ *Ике ферма ла ҡышҡы осорҙа малдарҙың юғары продуктлылығына өлгәшеү өсөн район ярышы инициаторы.* «Совет Башҡортостаны», 1986, 21 ғинуар.

**ИНК** *и.* 11—13 быуаттарҙа Перу ерендә йәшәгән кечуа телле инд ҡәбиләһе, һуңынан инд ҡәбиләләрен берләштергән дәүләткә хакимлек иткән ҡатлам һәм шуларҙың бер кешеһе.

**ИНКАР** [*ғәр.*] *и.* Ниҙең дә булһа кире ҡағылыуы, дөрөҫкә йәки барға һаналмауы. *Был дөрөҫ фекерҙәр мәҡәләләге дөйөм екеренеү, дәлилһеҙ инкар .. эсендә юғалып ҡала.* Р. Ниғмәти.

□ **Инкар итеү (*йәки* ҡылыу)** юҡ тип әйтеү, кире ҡағыу. *Камилдың камилына инкар ҡылып, түбәләшмәй баҫылмай беҙҙең асыу.* Аҡмулла.

**ИНКАССА́ТОР** [*рус.*] *и.* Банкыға тапшырыу өсөн төрлө ойошманан аҡса ҡабул итеп йөрөгән вазифалы кеше. *Банк инкассаторы.*

♦ **Инкассатор пункты** банкының түләнергә тейешле документтар буйынса аҡса ҡабул итеү эше менән шөғөлләнгән бүлеге.

**ИНКА́ССО** [*рус.* 〈*ит.*] *и.* *фин.* Ышаныс ҡағыҙы биргән кешенең ҡушыуы буйынса аҡса ҡабул итеүҙән ғибәрәт булған банк операцияһы.

**ИНКВИЗИ́ТОР** [*рус.* 〈*лат.*] *и.* **1.** Инквизиция судьяһы.

**2.** *күсм.* Кешене ғазаплаған яуыз бәндә.

**ИНКВИЗИ́ЦИЯ** [*рус.* 〈*лат.*] *и.* *тар.* Еретиктар менән көрәшеү өсөн католик сиркәү тарафынан 13 быуатта төҙөлөп, ҡанһыҙлығы менән дан алған суд. *Кешелек донъяһының күпме аҫыл ир-егеттәре .. халыҡ бәхетен яулау юлында инквизиция уттарында, ҡараңғы зиндандарҙа .. һәләк булды.* Ә. Хәкимов.

**ИНКУБА́ТОР** [*рус.* 〈*лат.*] *и.* Яһалма ысул менән себеш сығарыу аппараты (йыл әйләнәһенең теләгән ваҡытында һәм күпләп сығара). *Инкубатор себеше. Инкубаторҙа себеш сығарыу.* **Инкубатор станцияһы** инкубатор менән себеш сығара торған махсус бина.

**ИНКУБА́ЦИЯ** [*рус.* 〈*лат.*] *и.* **1.** *мед.* Ауырыу йоҡҡандан алып ауырый башлағанға тиклем үткән ваҡыт араһы. *Инкубация осоро. Инкубация осорон үткәреү.*

**2.** *а. х.* Себештең инкубатор ярҙамында сығарылыуы.

**ИНҠИЛАП** [*ғәр.*] *и.* *иҫк.* *кит.* **1.** Үҙгәреш. *Их! Тәбиғәттә хәҙер инҡилап, яҙ нурҙары ҡышты еңәләр.* Ғ. Хәйри.

**2.** Революция. *Саҡырығыҙ бөтә эшселәрҙе инҡилапҡа, алға, ҙур эшкә.* Д. Юлтый.

**ИНҠИЛАПСЫ** *и.* *иҫк.* *кит.* Революционер. *Бер ҙә китмәҫ йөрәктә эҙ ҡалған — истибдадтың тырнаҡ ҡараһы. Онотормо шуны үҫле күңел — инҡилапсы халыҡ балаһы?* Т. Йәнәби.

**ИНҠИРАЗ** [*ғәр.*] *и.* *иҫк.* *кит.* Ниҙеңдер бөтөүгә барыуы, юҡҡа сығыуы. *Башҡорттар ҙа иркенлектән бер заман инҡиразға баш эйгән.* Д. Юлтый. *Бара торғас һандуғастар ҡалды эҙгә, йөҙ тотто бисаралар инкиразға.* М. Ғафури.

**ИНЛЕ** [1] *с.* Ин һалынған, ине булған; инәүле. *Ҡолағы инле мал.*

**ИНЛЕ** [2] *с.* *диал.* Иңле.

**ИНЛЕК** [1] *и.*, **инлек ҡапҡа** Ике яҡтағы ҡушар бағана араһына аҫлы-өҫлө һайғау һалып ҡына кәртәләнә торған ҡапҡа. *Инлек бағанаһы.* ■ *Малайҙар йүгереп йөрөп инлек ҡапҡаны ҡойма буйына ташыны ла, арбаға юл бирреп, ситкә тайпылды.* Я. Хамматов.

**ИНЛЕК** [2] *и.* Биткә һөртә торған ҡыҙыл буяу. *Инлек һөртөү.* ■ *Комсомолдар ҡаш ҡараһы, инлек, беләҙек, йөҙөк кеүек нәмәләр менән булышмаған.* С. Агиш.

**ИНЛӘҮ** *к.* *диал.* Иңләү.

**ИНСАН** [*ғәр.*] *и.* *иҫк.* *кит.* Кеше. **Ибне инсан** *йәки* **инсан улы** әҙәм балаһы; кеше. *Инсан улын алдалау анһат, еңел, сөнки ул бер ҡатлы һәм йомшаҡ күңел.* Ш. Бабич.

**ИНСАНИ** [*ғәр.*] *с.* *иҫк.* *кит.* Кешегә хас, кешегә мөнәсәбәтле.

**ИНСАНИӘТ** [*ғәр.*] *и.* *иҫк.* *кит.* **1.** Кешелек йәмғиәте, кешелек. *Инсаниәт донъяһы.* ■ *Инсаниәт шәжәрәһенән йыйып әҫәр, милләткә мөкәммелсә күрһәт хеҙмәт.* С. Яҡшығолов.

**2.** Кешегә хас бөйөк, яҡшы сифаттар, кеше һөйөүсәнлек, кешелеклелек. *[Әмирханов:] Кешенең инсаниәтен хәкәрәт итергә .. берәүгә лә ирек бирелмәҫ.* С. Агиш. *[Ғази:] Ғали инсаниәт бар ул. Бер ваҡыт ул барыһынан да өҫтөн буласаҡ.* А. Таһиров.

**ИНСАФ** [*ғәр.*] *и.* **1.** Кеселекле, тәрбиәле холоҡ, тыйнаҡлылыҡ, әҙәп. *[Кәримә:] Инсафыңа ҡайт, Зәйнәп, кеше араһында үҙеңде лә, беҙҙе лә мәсхәрә итмә.* Ғ. Ныязбаев.

**2.** *иҫк.* Ғәҙеллек, тоғролоҡ. *Һәр кеше хәл ҡәҙәре ҡылһын инсаф.* М. Ғафури.

□ **Инсафҡа ҡайтыу** инсафлыға әйләнеү, инсафланыу.

**ИНСАФЛАНЫУ** *к.* Инсафлыға әйләнеү; тыйнаҡланыу. *Бала ҙурайып инсафланып киткән.*

**ИНСАФЛЫ** *с.* Кеселекле, тәрбиәле, әҙәпле. *Ирйегет тә .. йомшаҡ, сабыр холоҡло, игтибарлы, инсафлы: бер ваҡытта ла тауыш күтәрмәҫ, кеше һүҙен бүлдермәҫ, оло һүҙен йыҡмаҫ, кесене рәнйетмәҫ.* З. Биишева.

**ИНСАФЛЫҠ** *и.* Инсафлы булыу. *Инсафлыҡ күрһәтеү.*

**ИНСАФҺЫҘ** *с.* Тәрбиәһеҙ, әҙәпһеҙ; оятһыҙ. *Инсафһыҙ кеше.*

**ИНСАФҺЫҘЛЫҠ** *и.* Тыйнаҡһыҙлыҡ, әҙәпһеҙлек. *[Аҡ бабай — Барыйға:] Был ниндәй инсафһыҙлыҡ! Өлкәндәр һөйләгәндә өндәшмәйҙәр! Аңланыңмы?* Р. Ғабдрахманов.

**ИНСЕ** *и.*, **инсе мал** Кешегә атап ҡуйған мал (аталған көнөнән бөтә үрсеме инсе эйәһенеке була, ир бала башҡа сыҡҡанда, ҡыҙ бала кейәүгә киткәндә тотош алып китә). **Ҡыҙ инсеһе** килен булып төшкән ҡыҙҙың кейәү йортона алып барған инсе малы. *Бер аҙҙан Йәмһүрҙең улы, Һөмһөрҙөң ҡыҙы тыуған. Былар элекке ҡуйышҡан һүҙҙәре буйынса ҡоҙа булышып, ҡыҙ инсеһе бирешеп ҡуйған* (Әкиәттән).

♦ **Инсе теләй (йәки теләгән)** баланың ҡолаҡ арты сейләнгәндә әйтелә (мал инселәп, инәү һалғанда сыҡҡан ҡанын баланың ҡолағына һөртөп имләйҙәр).

**ИНСЕКТИЦИ́Д** [*рус.* ⟨*лат.*] *и.* Ауыл хужалығы ҡортҡостарына ҡаршы ҡулланыла торған ағыулы химик матдә.

**ИНСЕЛӘНЕҮ** *к. төш. кар.* **инселәү.** *Инселәнгән мал.*

**ИНСЕЛӘТЕҮ** *к. йөкм. ҡар.* **инселәү.**

**ИНСЕЛӘҮ** *к.* Малды берәй кеше исеменә атап, ин һалыу. *Файза әбей улын дүрт күҙ менән көттө, .. бер һарыҡ инселәп ҡуйҙы.* Ж. Кейекбаев.

**ИНСПЕ́КТОР** [*рус.*] *и.* **1.** Үҙ ҡарамағындағы ойошма һәм кешеләрҙең эште дөрөҫ алып барыуын күҙәтеп, тикшереп, контроль яһап барыусы вазифалы кеше. *Роно инспекторы. Финанс инспекторы.*

**2.** Революцияға тиклемге Россияла: ирҙәр уҡыу йорттарында уҡыу һәм тәрбиә буйынса директор ярҙамсыһы.

**ИНСПЕКТОРЛЫҠ** *и.* Инспектор хеҙмәте, инспектор вазифаһы. *Инспекторлыҡ эше. Инспекторлыҡ вазифаһы.*

**ИНСПЕ́КЦИЯ** [*рус.*] *и.* Үҙ ҡарамағындағы ойошма һәм кешеләрҙең эште дөрөҫ алып барыуын күҙәтеп, тикшереп, контроль яһаған ойошма. *Милиция инспекцияһы. Һунарсылыҡ инспекцияһы. Инспекция яһау.*

♦ **Хеҙмәт инспекцияһы** профсоюздар ҡарамағында торған СССР-ҙа хеҙмәт закондарын һаҡлаусы махсус орган.

**ИНСТА́НЦИЯ** [*рус.* <*лат.*] *и.* Бер-береһенә буйһонған партия, дәүләт, суд, профсоюз һ. б. идара органдары системаһында айырым бер баҫҡыс. *Беренсе инстанция. Һуңғы инстанция. Юғарғы инстанция.*

**ИНСТИ́НКТ** [*рус.* ⟨*лат.*] *и.* **1.** *биол.* Йән эйәләренең эске һәм тышҡы шарттарҙағы үҙгәреш йоғонтоһонда аңһыҙ рәүештә маҡсатлы эш башҡара торған тәбиғи һәләтлеге. *Үрсеү инстинкты. Һаҡланыу инстинкты.*

**2.** *күсм. һөйл.* Һиҙем.

**ИНСТИНКТИВ** [*рус.* инстинктивный] *с.* **1.** *биол.* Инстинкттан килгән, инстинктҡа бәйле. *Инстинктив эш. Инстинктив рәүештә эшләү.*

**2.** Ихтыярҙан тыш эшләнгән; ихтыярһыҙ. *Инстинктив хәрәкәт.*

**ИНСТИТУ́Т** [*рус.* ⟨*лат.*] *и.* **1.** Ҡайһы бер юғары уҡыу йорттарының һәм ғилми-тикшереүеү ойошмаларының атамаһы. *Ғилми тикшеренеү институты. Педагогия институты.*

**2.** Революцияға тиклемге Россияла: юғары ҡатлам ҡыҙҙары өсөн булған ябыҡ типтағы урта мәктәп.

**3.** Ижтимағи мөнәсәбәттең айырым бер өлкәләге хоҡуҡ нормалары, йәмғиәт ҡоролошоноң теге йәки был формаһы.

**ИНСТРУКТА́Ж** [*рус.*] *и.* Йүнәлеш бирә торған күрһәтмә. *Инструктаж алыу. Инструктаж биреү* (үткәреү). ■ *Медицина персоналы тейешле инструктаж үтте, медпункттар махсус аппаратуралар менән тәьмин ителде.* «Совет Башҡортостаны», 1986, 11 июнь.

**ИНСТРУКТИВ** [*рус.* инструктивный] *с.* Етәксе күрһәтмәләре булған. *Инструктив күрһәтмә. Инструктив хат.*

**ИНСТРУ́КТОР** [*рус.* ⟨*лат.*] *и.* **1.** Үҙ ҡарамағындағы совет, дәүләт һәм йәмәғәт ойошмаларының, кешеләрҙең эшен тикшереп, йүнәлеш һәм күрһәтмә бирә торған вазифалы кеше. *Райком инструкторы.*

**2.** Берәр төрлө һөнәргә, оҫталыҡҡа өйрәтеүсе. *Инструктор Иван Митрофанович Петров осорға өйрәткән тәүге уҡыусым булды.* М. Гәрәев.

**ИНСТРУ́КЦИЯ** [*рус.* ⟨*лат.*] *и.* Билдәле бер эште башҡарыу тәртибен билдәләгән күрһәтмәләр; ҡулланма. *Инструкция алыу. Инструкция биреү. Хәүефһеҙлек техникаһы буйынса инструкция үткәреү.*

**ИНСТРУМЕ́НТ** [*рус.* ⟨*лат.*] *и.* **1.** Билдәле бер эште башҡарыу өсөн ҡулланылған ҡул ҡоралы; эш ҡоралы. *Хирургия инструменттары. Инструменттар йәшниге.*

**2.** (*йәки* **музыкаль инструмент**) Көй сығара торған ҡоралдар; музыка ҡоралы. *Ҡыллы инструменттар. Халыҡ инструменттары.* ■ *Ҡурай музыкаль инструмент булыу йәһәтенән башҡа музыка ҡоралдарынан ныҡ айырыла.* Ғ. Сөләймәнов.

**ИНСТРУМЕНТАЛЬ** [*рус.* инструментальный] *с.* Музыка ҡоралдары менән башҡарып булған һәм музыка ҡоралдары менән башҡарыуға тәғәйенләнгән. *Инструменталь музыка. Инструменталь әҫәр.*

**ИНСТРУМЕНТО́ВКА** [*рус.*] *и.* **1.** *муз.* Музыкаль әҫәрҙең оркестр йәки инструменталь ансамбль өсөн әҙерләнеше; оркестровка.

**2.** Музыка теорияһының айырым музыка ҡоралдарының үҙенсәлеген һәм оркестрҙа уларҙы файҙаланыу принциптарын өйрәнә торған бүлеге.

**ИНСУЛИ́Н** [*рус.* ⟨*лат.*] *и.* Ашҡаҙан аҫты би-

ҙенең гормоны (организмдағы углевод әйләнешендә ҡатнаша).

**ИНСУ́ЛЬТ** [*рус.* ⟨*лат.*] *и. мед.* Мейеләге ҡан әйләнешенең ҡапыл боҙолоуы (иҫте юғалтыуға, параличҡа килтерә).

**ИНСЦЕНИРО́ВКА** [*рус.*] *и.* Сәхнәләштерелгән әҫәр. *М. Кәримдең «Үлмәҫбай» поэмаһының инсценировкаһы. Инсценировка яһау.*

**ИНСЦЕНИРОВКАЛАУ** *ҡ.* Әҙәби әҫәрҙе театрҙа йәки кинола ҡуйыу өсөн ҡулайлаштырыу; сәхнәләштереү. *Романды инсценировкалау.*

**ИНСӘ** *и. диал.* Уйһыу. *Йәйелеп китә унан тулҡынланып гөл диңгеҙе — йәмле инсәләр.* С. Ҡудаш.

**ИНТЕГЕҮ** (интек≠) *ҡ.* **1.** Ауыр эштән, ауыр тормоштан, ҡайғы-хәсрәттән йәки башҡа сәбәптән тән һәм йән ғазабы киеереү; ыҙа сигеү, аҙап күреү. *Ауырыуҙан интегеү. Интегеп көн күреү. Интегеп эшләү.* ■ *Байға һатып йәшлек, беләк көсөн, бер рәхәтһеҙ [ярлылар] интеккән.* С. Кулибай. *Аҙаштырған болан балаһындай, яңғыҙ башым ситтә интегәм* (Халыҡ йырынан).

**2.** Нимәгәлер мохтаж булғанлыҡтан йөҙәү; йонсоу. *Һыуһыҙ интегеү. Кейемһеҙ интегеү.*

**3.** Бер нәмәне башҡара алмай аптырау; ыҙаланыу. *Мәсьәләне хәл итә алмай интегеү.* ■ *Өсөнсө көн инде шыр урманда юл таба алмай интектем.* Б. Вәлит.

**ИНТЕГРА́Л** [*рус.* ⟨*лат.*] *и. мат.* Дифференциацияға ҡапма-ҡаршы ғәмәл һөҙөмтәһендә алынған бер бөтөн дәүмәл. *Интеграл тамғаһы. Интеграл табыу.*

**ИНТЕГРАЛЬ** [*рус.* интегральный] *с.* **1.** *мат.* Интегралға мөнәсәбәтле. *Интеграль тигеҙләмә.*

**2.** *кит.* Бөтөн, берҙәм. *Интеграль организм.*

**ИНТЕГРА́ТОР** *и.* Интегралды билдәләй торған хисаплау ҡорамалы.

**ИНТЕГРА́ЦИЯ** [*рус.* ⟨*лат.*] *и.* **1.** *мат.* Билдәле бер функциялағы интегралдың табылыуы.

**2.** *кит.* Төрлө нәмә өлөштәренең бер бөтөнгә берләштерелеүе.

**3.** *эк.* Йәмғиәт төҙөлөшө бер төрлө булған илдәрҙең милли хужалыҡтарының бер-береһенә ҡулайлашыу һәм берләшеү процесы. *Социалистик илдәрҙең экономик интеграцияһы.*

**ИНТЕГРАЦИЯЛАУ** *ҡ.* **1.** *мат.* Интеграл табыу.

**2.** *кит.* Төрлө өлөштәр бер бөтөнгә берләшеү.

**3.** *эк.* Интеграция (3 мәғ.) яһау, үткәреү. *Фән һәм производствоны интенсивлаштырыу, интеграциялау, социаль-экономик планлаштырыу программаһына нигеҙләнә.* «Совет Башҡортостаны», 1986, 26 февраль.

**ИНТЕКТЕРГЕС** *с.* Йөҙәткес, йонсотҡос, аҙаплы. *Интектергес хәл. Интектергес уйҙар.*

**ИНТЕКТЕРЕҮ** *ҡ.* Ғазап сиктереү, яфа сиктереү; йонсотоу, ыҙалатыу. *Кешене интектереү.* ■ *[Сәрүәр:] Зинһар егет интектермә, күҙ йәштәремде түктермә.* Х. Ибраһимов.

**ИНТЕЛЛЕ́КТ** [*рус.* ⟨*лат.*] *и.* Кешенең уйлау, фекер итеү һәләте; аҡыл үҫешенең кимәле. *Беҙ кеше аңының ... ғәйәт киңәйгән ваҡытында, юғары интеллект заманында йәшәйбеҙ.* Ә. Хәкимов.

**ИНТЕЛЛЕКТУАЛЬ** [*рус.* интеллектуальный] *с. кит.* Фекер һәм аңға бәйле; рухи. *Интеллектуаль үҫеш. Интеллектуаль һәләтлек.* / Аҡыл һәм фекерләү һәләте юғары. *Интеллектуаль рәссам.*

**ИНТЕЛЛИГЕ́НТ** [*рус.* ⟨*лат.*] *и.* Баш эше менән шөғөлләнгән кеше, интеллигенция вәкиле. // *Интеллигент кеше.*

**ИНТЕЛЛИГЕНТЛЫҠ** *и.* **1.** Интеллигенттарға, интеллигенцияға хас сифат. *Үҙен тотоуҙағы интеллигентлығы.*

**2.** Уҡымышлылыҡ, тәрбиәлелек, культуралылыҡ.

**ИНТЕЛЛИГЕ́НЦИЯ** [*рус.* ⟨*лат.*] *и.* **1.** Фән, техника, культура өлкәһендә махсус белем алып, баш эше менән шөғөлләнгән социаль ҡатлам. *Совет интеллигенцияһы.* ■ *Башҡорт АССР-ының социаль нигеҙен эшсе, крәҫтиән һәм интеллигенцияның ҡаҡшамаҫ союзы тәшкил итә.* Башҡорт АССР-ының Конституцияһы, 1984.

**2.** *йыйн.* Шул ҡатламға ингән кешеләр; интеллигенттар. *Хәҙер Ҡарамалы ауылының да совет мәктәбе тәрбиәләп сығарған үҙ интеллигенцияһы була башланы.* М. Тажи.

**ИНТЕНДА́НТ** [*рус.* ⟨*фр.*] *и.* Интендантствола хеҙмәт иткән хәрби кеше. *Ул [генерал] интенданттарҙың теңкәләренә тейеп бөтә, һалдаттарҙы мул ашатырға, яҡшы кейендерергә ҡуша ине.* Ә. Ихсан.

**ИНТЕНДА́НТСТВО** [*рус.*] *и.* Армияны тәьмин иткән һәм бөтә хужалыҡты алып барған хәрби ойошма.

**ИНТЕНСИВ** [*рус.* интенсивный] *с.* Көсөргәнешле, ныҡышмалы. *Интенсив көрәш.* ■ *Колхозсыларҙың шәхси йорттары ла интенсив рәүештә үҫә.* Ә. Вәли. / Иң юғары һөҙөмтәле. *Интенсив технология. Интенсив ысул.* ■ *Интенсив методтар халыҡ хужалығы үҫешенең тоторҡло темпын тәьмин итергә мөмкинлек бирҙе.* «Совет Башҡортостаны», 1986, 19 апрель.

**ИНТЕНСИВЛАШТЫРЫУ** *ҡ. кит.* Эштең барышын, хужалыҡтың үҫешен тиҙләтеү, көсәйтеү. *Ауыл хужалығын интенсивлаштырыу. Хеҙмәтте интенсивлаштырыу.*

**ИНТЕРВА́Л** [*рус.* ⟨*лат.*] *и.* **1.** Ике нәмәне айырып торған алыҫлыҡ; ара. *Ҙур интервал. Интервал менән теҙелеү. Рәткә теҙелгәндә интервал яһау.*

**2.** Ваҡыт араһы. *Автобустар тигеҙ интервал аша юлға сыға.*

**3.** *муз., физ.* Бер юлы йәки бер-бер артлы сығарылған ике тауыш араһындағы ҡалынлыҡ-нәҙеклек айырмаһы.

**ИНТЕРВЕ́НТ** [*рус.*] *и.* Интервенцияла ҡатнашыусы. *Интервенттарға ҡаршы көрәш.*

**ИНТЕРВЕ́НЦИЯ** [*рус.* ⟨*лат.*] *и.* Ер баҫып алыу, революцион йәки милли хәрәкәтте баҫтырыу маҡсатында бер йәки бер нисә дәүләттең айырым дәүләт эшенә ҡораллы көс ярҙамында ҡыҫылыуы.

**ИНТЕРВИ́ДЕНИЕ** [*рус.*] *и.* Халыҡ-ара телевизион тапшырыуҙар системаһы һәм шул тапшырыуҙар.

**ИНТЕРВЬЮ́** [*рус.* ⟨ *ингл.*] *и.* Корреспонденттың берәй эшмәкәр менән матбуғат, радио йәки

телевидение өсөн үткәргән әңгәмәһе. *Интервью алыу. Интервью биреү.* / Шул әңгәмәне сағылдырған газета мәҡәләһе.

**ИНТЕРЕ́С** [*рус.* ⟨ *лат.*] *и.* Файҙа, мәнфәғәт, ихтыяж. *Халыҡ интерестары. Синфи интерестар.*

**ИНТЕРЛЮ́ДИЯ** [*рус.* ⟨*ит.*] *и. муз.* Музыкаль әҫәрҙең ике өлөшөн бер-береһенә бәйләй торған бәләкәй пьеса йәки уның өҙөгө.

**ИНТЕРМЕ́ДИЯ** [*рус.* ⟨*ит.*] *и.* **1.** Драма, опера әҫәрҙәренең айырым шаршауҙары араһында күрһәтелә торған көлкөлө күренеш йәки пьеса.

**2.** *кар.* **интерлюдия.**

**ИНТЕРНА́Т** [*рус.* ⟨*лат.*] *и.* **1.** Дәүләттән өлөшләтә ярҙам алып уҡый торған ятаҡлы мәктәп. *Музыка интернаты.*

**2.** Мәктәп эргәһендәге уҡыусылар ятағы. *Интернатта йәшәү. Интернатҡа урынлашыу.*

**ИНТЕРНАТЛЫ** *с.* Интернаты (2 мәғ.) булған. *Интернатлы мәктәп.*

**ИНТЕРНАЦИОНА́Л** [*рус.* ⟨*фр.*] *и.* **1.** Ҡайһы бер атамалар эсенә инеп, халыҡ-ара берекмәтигәнде аңлата. *Коммунистик Интернационал.*

**2.** (*баш хәреф менән*) Халыҡ-ара пролетариаты һәм Советтар Союзы Коммунистар партияһының һәм башҡа коммунистар партияһының гимнының исеме. *[1920 йылда] «Интернационал» менән «Матәм маршы» башҡортсаға тәржемә ителеп, айырым листовкаларға баҫып таратылды.* Д. Юлтый.

**ИНТЕРНАЦИОНАЛИ́ЗМ** [*рус.* ⟨*фр.*] *и.* Төрлө милләт һәм расанан торған эшселәр һәм хеҙмәтсәндәрҙең хәл һәм мәнфәғәт уртаҡлығын белдергән, психология, идеология һәм политикала сағылған халыҡ-ара берҙәмлеге. *Пролетар интернационализм. Интернационализм идеяһы.*

**ИНТЕРНАЦИОНАЛИ́СТ** [*рус.*] *и.* Интернационализм яҡлы кеше.

**ИНТЕРНАЦИОНАЛИСТИК** *с.* Интернационализм яҡлы, интернационализм нигеҙле. *Интернационалистик ҡараш.*

**ИНТЕРНАЦИОНАЛЛӘШЕҮ** *к.* Интернациональ рәүеш, халыҡ-ара төҫ алыу. *Хәҙерге ваҡытта йыр интернационалләшә бара.* Ғ. Шафиҡов.

**ИНТЕРНАЦИОНАЛЛӘШТЕРЕҮ** *к.* Интернациональ рәүеш, халыҡ-ара төҫ биреү.

**ИНТЕРНАЦИОНАЛЬ** [*рус.* интернациональный] *с.* **1.** Халыҡ-ара. *Интернациональ бәйләнеш. Эшселәр класының интернациональ берҙәмлеге.* / Төрлө халыҡ, милләт вәкилдәренән торған. *Интернациональ бригада. Интернациональ отряд.*

**2.** Интернационализм принциптарына нигеҙләнгән. *Йәштәргә интернациональ тәрбиә биреү. Интернациональ дуҫлыҡ.* ■ *БАССР гражданының интернациональ бурысы — башҡа илдәрҙең халыҡтары менән дуҫлыҡты һәм хеҙмәттәшлекте үҫтереүгә, дөйөм тыныслыҡты һаҡлауға һәм нығытыуға булышлыҡ итеү.* Башҡорт АССР-ының Конституцияһы, 1984.

**ИНТЕРПРЕТА́ТОР** [*рус.*] *и. кит.* Аңлатма биреүсе, интерпретация яһаусы.

**ИНТЕРПРЕТА́ЦИЯ** [*рус.* ⟨*лат.*] *и. кит.* Берәй нәмәнең асылын, мәғәнәһен асҡан аңлатма. *Интерпретация яһау.*

**ИНТЕРЬЕ́Р** [*рус.* ⟨*фр.*] *и.* **1.** *архит.* Бинаның архитектура һәм сәнғәт саралары менән биҙәлгән эске өлөшө.

**2.** *сәнг.* Бинаның эске күренешен һүрәтләгән рәсем.

**ИНТИЗАМ** [*ғәр.*] *и. иҫк. кит.* Эш-тормошта урынлашҡан тәртип. *Әһле зиндиҡ шаҡ ҡатып торһон, боҙолһон интизам.* Ш. Бабич.

**ИНТИЗАР** [*ғәр.*]: **интизар булыу** бик нығ көтөү, зарығып көтөү, зар булыу. *Өс йыл булдым инде зар, бер күреүгә интизар* (Халыҡ йырынан). **Интизар итеү** бик нығ көттөрөп зарыҡтырыу; зар итеү.

**ИНТИҠАМ** [*ғәр.*] *и. иҫк.* Ҡон, үс.

**ИНТИМ** [*рус.* интимный ⟨ *фр.*] *с. кит.* Берәүҙең үҙ шәхесенә, шәхси тормошона ҡағылышлы. / Тойғо өлкәһенә, эске донъяға ҡағылышлы. *Интим темаға һөйләшеү.*

**ИНТИҺА** [*ғәр.*] *и. иҫк. кит.* Берәй нәмәнең аҙағы, һуңғы сиге. *Ғилемдең интиһаһы юҡ.*

**ИНТИҺАЗ** [*ғәр.*] *и. иҫк. кит.* Уңайлы ваҡыттан, мөмкинлектән файҙаланыш. *Барсамды юҡтан бар ҡылып, йән биреп, ризыҡ биргән илаһ ҡәдим ибтидаән вә интиһаз аллаһ зөлйәләлдер.* М. Өмәтбаев.

**ИНТОНА́ЦИЯ** [*рус.* ⟨*ит.*] *и.* **1.** *кит.* Һөйләүсенең эске тойғоһон, кисерешен сағылдырған тауыш үҙенсәлеге. *Юғары интонация.*

**2.** *лингв.* Телмәрҙең ритмик-мелодик төҙөлөшө, юғары һәм түбән тауыштарҙың телмәрҙәге сиратланышы. *Интонация саралары. Өндәү интонацияһы. Һорау интонацияһы. Интонацияға бай телмәр.* ■ *Ике йәки өс һүҙҙән торған һүҙ бәйләнеше бер интонация менән әйтелһә лә, ул һүҙҙәрҙең бөтәһендә лә баҫым бер тигеҙ булмай.* Ж. Кейекбаев.

**3.** *муз.* Көйҙө йырлағанда йәки музыка ҡоралында уйнағанда тауыштың, тондың юғары күтәрелеүенең дөрөҫлөгө, сафлығы.

**ИНТРИ́ГА** [*рус.* ⟨*фр.*] *и.* **1.** *кит.* Аҫтыртын этлек; хөсөтлөк. *Интрига тыуҙырыу.*

**2.** *әҙ.* Драматик йәки эпик әҫәрҙәге шәхестәр көрәшен күрһәткән ваҡиғаларҙың үҫеш схемаһы. *[Әҫәрҙә] композиция тарҡау, интрига бөтөнләй күренмәй.* С. Кулибай.

**ИНТРИГА́Н** [*рус.*] *и.* Интрига (1 мәғ.) менән шөғөлләнеүсе.

**ИНТУИТИВ** [*рус.* интуитивный] *с. кит.* Интуицияға нигеҙле, интуицияға бәйле. *Интуитив тойғо.* ■ *Шағир яҡшылыҡтың яманлыҡты еңеренә интуитив рәүештә ышана.* Ғ. Әмири.

**ИНТУИ́ЦИЯ** [*рус.*] *и. кит.* **1.** Тормош, эш тәжрибәһе нигеҙендә ирекһеҙ рәүештә үҙенән-үҙе барлыҡҡа килгән дөрөҫ фекер; һиҙем. *Интуицияға таянып эш итеү.*

**2.** Ысынлыҡты, хәҡиҡәтте дәлилһеҙ туранан-тура аңлап, төшөнә алыу һәләте. *Интуиция менән билдәләү.*

**ИНТУИЦИЯЛЫ** *с. кит.* Интуицияһы көслө.

**ИНТӘР** *и. диал.* Иңкеү. *Дүрт-биш сиҡырым самаһы ҡалғас, бәйге майҙаны күренде. Юл интәргә, түбәнгә китте.* Д. Юлтый.

**ИНФАНТИЛИ́ЗМ** [*рус.* ⟨*лат.*] *и. мед.* Балалыҡҡа хас физик, психик сифаттарҙың оло йәштә лә һаҡланыуы.

**ИНФА́РКТ** [*рус.* ⟨*лат.*] *и. мед.* Ҡан тамырҙары көпләнеп йәки тарайып, ҡан йөрөшө насарланыу сәбәпле берәй ағза туҡымаһында барлыҡҡа килгән үле урын. *Миокард инфаркты. Инфаркт булыу.* ■ *Йөрәккәйең бер үк сәнсмәһен,— ти [кәләшем],— инфаркт булып ҡуйһаң, нишләрһең, һаҡлана күр..* Я. Ҡолмой.

**ИНФЕКЦИОН** [*рус.* инфекционный] *с.* Инфекция арҡаһында булған, инфекцияға бәйле; йоғошло. *Инфекцион ауырыу. Инфекцион ауырыуҙарға ҡаршы прививка үткәреү.* ■ *Талпан энцефалиты — организмға вирус эләгеүҙән барлыҡҡа килеүсе инфекцион ауырыу. Талпандар был вирустарҙы төп һаҡлаусылар һәм таратыусылар булып тора.* «Совет Башҡортостаны», 1986, 25 май.

**ИНФЕ́КЦИЯ** [*рус.* ⟨*лат.*] *и.* Организмға ауырыу йоҡтора торған микробтарҙың инеүе. *Полиомиелит инфекцияһы. Эсәк инфекцияһы. Инфекция таратыу.*

**ИНФИҒӘЛ** [*ғәр.*] *и. иҫк. кит.* Болоҡһоу, бошоноу, көйөнөү һымаҡ төрлө тойғо. *Уҡыһаң вә гәйет, аят инфиғәл юк, аһ дәриға, мәхшәрҙә ни буласаҡбыҙ.* Аҡмулла.

**ИНФИНИТИ́В** [*рус.* ⟨*лат.*] *и. грам.* Ҡылымдың зат ялғауы менән үҙгәрмәй торған формаһы; уртаҡ ҡылым. *Инфинитив башҡорт телендә исем ҡылымдың бер формаһы булып тора.* Н. Дмитриев.

**ИНФЛЯ́ЦИЯ** [*рус.* ⟨*лат.*] *и. эк.* Ҡағыҙ аҡсаның тауар әйләнеше талап иткәндән артыҡ сығарылыуы сәбәпле хаҡһыҙланыуы. *Инфляция арҡаһында тауар хаҡы арта, ә ҡағыҙ аҡсаның ҡиммәте кәмегәндән-кәмей.* «Совет Башҡортостаны», 1965, 16 октябрь.

**ИНФОРМА́ТОР** [*рус.*] *и.* Информация яһаусы, хәбәр биреүсе.

**ИНФОРМАЦИОН** [*рус.* информационный] *с.* Информация рәүешендәге. *Информацион мәҡәлә.*

**ИНФОРМА́ЦИЯ** [*рус.* ⟨*лат.*] *и.* **1.** Берәй эш-хәл тураһында бирелгән хәбәр; белешмә, мәғлүмәт. *Информация агентствоһы. Информация бюроһы. Информация биреү. Информация тыңлау.* ■ *Культура һәм сәнғәт үҫеш алды, культура-ағартыу учреждениелары, массовый информация һәм пропаганда средстволарының эшмәкәрлеге камиллаштырылды.* «Совет Башҡортостаны», 1985, 9 ноябрь.

**2.** Кеше йәки махсус ҡоролма тарафынан ҡабул ителгән донъялағы төрлө хәлдәр тураһында булған төрлө хәбәр, мәғлүмәт.

**ИНФРАҠЫҘЫЛ** [*рус.* ⟨*лат.* + *төрки*]: **инфраҡыҙыл нурҙар** *физ.* тотош спектрҙың ҡыҙыл өлөшө артында йылылыҡ тәьҫире биреүсе күҙгә күренмәй торған нурҙар.

**ИНФРАТАУЫШ** [*рус.* ⟨*лат.* + *төрки*] *и. физ.* Кеше ҡолағы ҡабул итә алмай торған тирбәлеү йышлығы түбән тауыш тулҡындары. **Инфратауыш тулҡындары** тирбәлеү йышлығы түбән булған тауыш тулҡындары.

**ИНФУЗО́РИЯ** [*рус.* ⟨*лат.*] *и.* Иң юғары үҫеш кимәлендәге бер күҙәнәкле һыу йәнлеге (тоҙло һәм тоҙһоҙ һыуҙа йәшәй).

**ИНХИЛАЛ** [*ғәр.*] *и. иҫк.* Тарҡалыш.

□ **Инхилал итеү** тарҡатыу. *Йөрәк ҡаның инхилал иткән әсе йәштәрҙе ағыҙһаң да йәшең бушҡа аҡмай.* А. Таһиров.

**ИНҺӘЛЕК** *и. диал.* **1.** Иңһәлек.

**2.** *ҡар.* **арҡалыҡ**[1].

**ИНЦИДЕ́НТ** [*рус.* ⟨*лат.*] *и. кит.* Күңелһеҙ, хәүефле ваҡиға, бәрелеш. *Сик буйы инциденты.*

**ИНША** [*ғәр.*] *и.* Уҡыусыны фекер йөрөтөргә өйрәтеү маҡсатында билдәле бер темаға үткәрелә торған яҙма эш. *Инша яҙыу.* ■ *Сәлим студенттарға ҡағыҙ таратып бирҙе лә: « .. Иреклe инша, һәр кем үҙе теләгән темаға яҙа»* [*тине*]. С. Агиш.

**ИНШАД** [*ғәр.*]: **иншад итеү** (*йәки* **әйләү**) *иҫк.* шиғыр уҡыу, шиғыр һөйләү. *Иншад итеүсе мөләккаб дәрдеманд Аҡмуллағыҙ.* Аҡмулла.

**ИНШАЛЛА** [*ғәр.*] *инш. иҫк.* Алла теләһә. *Һис ҡайғырма, шатлан әүәлгесә, бәхет еңер әле, иншалла..* Ш. Бабич.

**ИНЪЕ́КЦИЯ** [*рус.* ⟨*лат.*] *и.* Тәнгә, тире аҫтына йәки тамырға дарыу ебәреү; укол яһау. *Инъекция өсөн дарыу. Инъекция яһау.*

**ИНӘ** *и.* **1.** Балаһы булған ҡатын (үҙ балаһына ҡарата); әсә. *Инә тойғоһо. Инә булыу. Инә тәрбиәһе. Инә һөтө. Инә ҡуйынында үҫеү. // Инә кеше.* ■ *[Хан — егеткә:] Ә бөтә алтынды ла, инәң менән үҙеңде лә .. бергә күтәреп алып китә алам! .. Үҙеңде ялсы итәм, инәңдән өй эше эшләтәм* (Әкиәттән).

**2.** Хайуан, йәнлек, ҡош-ҡорт һ. б. ата енесленә ҡаршы булған заты, әсәһе. *Ҡорт инәһе. Быҙау инәһенә ҡушылған.* ■ *Ҡолонсаҡ инәһе эргәһендә вайымһыҙ уйнап йөрөй.* Б. Бикбай. **Тоҡом инәһе** тоҡом үрсетеү өсөн тотолған инә мал. **Инә япҡыс** инә ҡортто айырып бикләй торған ситлек. **Инә ебәреү** күскә ҡорттоң инәһен ҡушыу. **Инә күнәге** (*йәки* **ятағы**) *диал. ҡар.* **инә япҡыс. Инәне ҡырҡыу** ҡорттоң күсендәге артыҡ инәне үлтереү.

**3.** *с. мәғ.* Ҡайһы бер йән эйәһе һәм үҫемлектәрҙең ата енесленә ҡаршы булғаны (енес буйынса махсус атамаһы булмағанда). *Инә айыу. Инә бесәй. Инә ҡаҙ. Инә сәскә. Инә тарма.*

**4.** Хөрәфәт буйынса, төрлө нәмәләрҙең именлеген һ. б. һаҡлап тора торған бер зат; эйә. *Тау инәһе. Һыу инәһе.*

♦ **Инәнән тыума** *ҡар.* **тыума**[2]. **Имсәк инә** әсәһе киткән арала баланы имеҙеп торған ҡатын. **Инә күрпәһе** *диал.* инә туны (*ҡар.* **тун**). **Инә ҡарыны** бала ята торған ҡарын. **Кендек инәһе** бала тыуғанда ҡабул итеп, кендеген ҡырҡҡан ҡатынҡыҙ. *Кендек инәһе булыу.* ■ *Тыуған ҡыҙ баланы ҡулына алып, Мөйылбикә үҙе кендек инәһе булды.* Һ. Дәүләтшина. **Һөм инәһе** сит баланы имеҙгән ҡатын йәки инә мал.

● *Атанан тыумай ул булмаç, инәнән тыумай ҡыҙ булмаç.* Мәҡәл. *Инәнән ала ла тыуа, ҡола ла тыуа.* Мәҡәл.

**ИНӘЙ** *и.* **1.** *ҡар.* **әсәй.**

**2.** Ата-әсәнән оло ҡатын-ҡыҙ туған һәм уға өндәшеү һүҙе. / Ғөмүмән ата-әсәнән оло ҡатынҡыҙ һәм уларға өндәшеү һүҙе. *Йә, инәй, һөйләп*

*ебәр әле, калағыҙҙа ниндәй ҡыҙыҡ хәлдәр бар?* *тигән биш батыр* (Әкиәттән).

♦ **Кендек инәһе** *шул уҡ* **кендек инәһе** (*ҡар.* **инә**).

**ИНӘК** *и. диал. ҡар.* **тоҡсай** 2.

♦ **Һыу инәк** *диал. ҡар.* **тубал** [2].

**ИНӘКӘ** *и.* Ғәҙәттән тыш бәләкәй кәүҙәле ҡатын-ҡыҙ.

**ИНӘКӘС** *с. диал.* Инәс.

**ИНӘЛДЕРЕҮ** *к. йөкм. ҡар.* **инәлтеү.** *Етмеш йәшәр йыраусы ҡарт Ҡәҙерғол һис инәлдермәй һүҙгә кереште.* Н. Иҙелбай.

**ИНӘЛЕ** *с.* Инәһе булған, инәһе бар. *Инәле булыу.*

● *Инәле бала етем булмаҫ.* Әйтем.

**ИНӘЛЕК** [1] *и.* **1.** Ҡаҙ-өйрәктең инәһе.

**2.** *ҡар.* **емшән.** *Инәлек еңсәһе. Инәлек күҙәнәге.* ■ *Ике өйлө үҫемлектәрҙең береһендә инәлек сәскәһе, икенсеһендә аталыҡ сәскәһе була.*

**3.** *ҡар.* **аналыҡ.**

**ИНӘЛЕК** [2] *и.* Тәңкә-сулпылы ҡаҙауыс.

**ИНӘЛЕ-СЫҒАЛЫ** *с.*, **инәле лә сығалы 1.** Ваҡыт-ваҡыт иҫе юғалып, аҡыл һәләте, иҫе үҙгәреп торған. *Инәле-сығалы булыу.*

**2.** *күсм.* Ҡапыл төрлөсә үҙгәреп торған, тотороҡло түгел (холоҡҡа ҡарата). *Инәле-сығалы холоҡло.*

**ИНӘЛЕҮ** *к.* Бик ныҡ үтенеү; ялыныу. *Инәләп һорау.* ■ *[Тулыбай] инәләп барыбер ярты бот он алды.* Ғ. Дәүләтшин. — *Бер үҙемде ҡалдырып китмәгеҙ инде,— тип ҡыҙ инәлә башлаған* (Әкиәттән).

**ИНӘЛЕШЕҮ** *к. урт. ҡар.* **инәлеү.**

**ИНӘЛТЕҮ** *к.* Инәлергә мәжбүр итеү. *Йәш йырсы инәлтмәй, йырлай ҙа йырлай.*

**ИНӘЛТЕШЕҮ** *к. урт. ҡар.* **инәлтеү.**

**ИНӘС** *с.* Төҫө, холоҡ-ҡылығы менән әсәһенә ныҡ оҡшаш (балаға ҡарата).

**ИНӘҮ** [1] *к.* Ин һалыу; инәүләү. *Һарыҡтың ҡолағын инәп ҡуйыу.*

**ИНӘҮ** [2] *и.* Мал-тыуарҙың ҡолағына, ҡошҡорттоң аяҡ ярыларына һалынған тамға; ин. *Инәү һалыу.* ■ *[Татлыбай] атаһының өҫтөндәге тәкә тиреһен алды ла, халыҡҡа тәкә ҡолағындағы инәүҙе күрһәтте.* Ш. Шәһәр.

♦ **Инәүле атом** *ҡар.* **атом.**

● *Инәүле мал юғалмай.* Мәҡәл.

**ИНӘҮЛӘНЕҮ** *к. төш. ҡар.* **инәүләү.** *Инәүләнгән мал.* ■ *[Ишбикә — Баянға:] Һинең ирең Башибәк — ҡолағы инәүләнгәс, ҡол түгелме ни?* Н. Иҙелбай.

**ИНӘҮЛӘҮ** *к.* Инәү [2], ин һалыу.

**ИНӘҺЕҘ** *с.* Инәһе булмаған, инәһе юҡ. *Инәһеҙ бәрәс. Инәһеҙ күс. Инәһеҙ ҡалыу.* / Шелтәләп әйтелгән һүҙ. *Ах, инәһеҙ, мине көтмәй киткән.* ■ *[Председатель һауынсы тураһында:] Бынау бисә.. аяҡ аҫтында буталып йөрөй. Нимә ти бит әле, инәһеҙ. Йыш килеп торалмай, имеш.* Я. Вәлиев.

● *Инәһеҙ ҡыҙ аҫрама, атаһыҙ ул аҫрама.* Әйтем.

**ИҢ** [1] *и.* Кәүҙәнең бер ҡулбаштан икенсе ҡулбашҡа ҡәҙәр булған артҡы өлөшө; яурын. *Сүкеш ҡоралдарын иңгә һалып, эшсе заводтарға бара.* Д. Юлтый. *Ҡара ҡытат елән ай иңемдә, ҡара ебәк билбау билемдә* (Халыҡ йырынан).

● *Ил яҙмышы ир иңендә.* Әйтем. *Ҡулың менән эшләгәнде иңең менән күтәр.* Әйтем.

**ИҢ** [2] *и.* **1.** Ниҙендер бер ситенән икенсе ситенә тиклем булған ара; киңлек. *Баҫыуҙың иңе. Тауарҙың иңе.* ■ *Һаргайып таң атҡанда, был бабай сумып төбөнә етмәҫ, үлсәп иңенә етмәҫ бер күлгә балыҡҡа барған, ти* (Әкиәттән).

**2.** *шиғр.* Ниҙең дә булһа иркен киңлеге. *Тальян моңо аға баҫыу иңенә.* Б. Бикбай. *Күк иңенә ҡолас ташлап, ниңә ҡалҡмайһың, йәйғор?* Ш. Бикҡол.

♦ **Иңе килһә, буйы килмәй, буйы килһә, иңе килмәй** етешһеҙ тормоштан интеккәндә белдереү өсөн әйтелә.

**ИҢ** [3] *киҫ.* Сифат, рәүеш, һан һәм ҡайһы бер исемдәр менән килеп, мәғәнәне көсәйтә. *Иң беренсе. Иң һылыу. Иң көслө.* ■ *Иң ахырҙа ҡуҙғала бер мәсьәлә, бар хыял-уйҙар ҙа шуға ташлана.* Ш. Бабич. *Поғондарым бөгөн тыныс өйҙөң иң түрендә тора эленеп.* Ғ. Әмири.

**ИҢБАШ** *и.* Ҡулдың яурынға тоташҡан урыны; ҡулбаш. *Иңбаш һөйәге.* ■ *Бына көйәнтәһенә ул биҙрәләр элде, иңбаштарына һалды ла йылғаға килде.* К. Кинйәбулатова.

**ИҢГӘ-ИҢ:** **иңгә-иң тороу** бер теләк, бер рухта булыу. *Иңгә-иң тороп һуғышыу.*

**ИҢЕ** [1] *с. иҫк.* Иге.

**ИҢЕ** [2] *и. иҫк.* Алла, хоҙай.

**ИҢЕ-БУЙЫ** *и.* **1.** Бер нәмәнең арҡыры-буй үлсәме. *Баҡсаның иңе-буйы 10 метрҙан артмай.*

**2.** *күсм.* Берәр нәмәнең бөтә булған киңлеге, бөтә майҙаны. *Илдең иңен-буйын иңләп үттем, күрҙем тауын, ялан, диңгеҙен.* А. Игебаев.

**ИҢЕР** *к. ҡар.* **үңер** 1.

**ИҢЕРБАУ** *и. ҡар.* **үңербау.** *Таҙа ғына аҡ ҡулдәктең иҙеүе оҙон иңербау менә бәйләнгән.* И. Насыри.

**ИҢЕШ** *и. туҡ.* Киндер һ. б. нәмә һуҡҡанда буйылыҡтың тәүге үлсәмдән ҡыҫҡарыуы. *Буйылыҡты иңеш өлөшөнә ҡалдырып һалыу.*

**ИҢЕШЕҮ** *к.* **1.** *туҡ.* Тәүге үлсәмдән ҡыҫҡарыу (буйылыҡ епкә ҡарата); ултырыу.

**2.** *диал. ҡар.* **ҡыҫҡарыу** 1.

**ИҢКЕЛ** *и. диал.* Иңкеүлек.

**ИҢКЕЛЕК** *к. диал.* Иңкәйеү. *Иңкелеп эшләү.*

**ИҢКЕ-МИҢКЕ** *р. диал.* **1.** Аңҡы-тиңке. *Иңке-миңке булыу.*

**2.** Илке-һалҡы. *Иңке-миңке эшләү.*

**ИҢКЕҮ** *с.* **1.** Түбәнгә табан ауыш. *Иңкеү ерҙә була тиҙәр ҡыр ҡаҙының ояһы* (Халыҡ йырынан).

**2.** *и. мәғ.* Ерҙең түбән киткән урыны; һарҡыу. *Иңкеүҙәрҙә гөрләүектәр аға.* ■ *Ҡарат тауы артындағы иңкеүҙә саңғы ярышы үткәрелде.* Ф. Иҫәнғолов.

**ИҢКЕҮЛЕК** *и.* Иңкеү булған урын. *Шыршы.. хатта 30 градуслы иңкеүлектә лә яҡшы үҫә.*

**ИҢКЕҮЛӘНЕҮ** *к.* **1.** Иңкеүгә (2 мәғ.) әйләнеү. *Иңкеүләнеп үҫкән ағас.*

**2.** Иңкеүгә (2 мәғ.) табан китеү. *Юл иңкеүләнгәс, аттарға еңел булып ҡалды.*

**ИҢКЕШ** [1] *и.* Бал ҡорттары ғаиләһенә ингән йомро йөнтәҫ эре бөжәк. *Ҡара иңкеш. Һары*

*иңкеш. Иңкеш ояһы.* ■ *— Өҙгәйнем сәскәне, һиҙмәй калдым,— ти [Гөлгөнә],— гөлгә кунган иңкеш сагып алды.* К. Кинйәбулатова. *Иңкеш ергә оялап бал йыя.* Т. Морат.

**ИҢКЕШ**[2] *с. диал. кар.* **иңкеү 1.** *Иңкеш ер.*

**ИҢКӘЙЕҮ** *к.* Алға табан бөгөлөү, эйелеү. *Иңкәйеп йөрөү.* ■ *Арҡаһындағы эйбере бер аҙ баҫҡангамылыр, ул [егет] сак кына алга иңкәйгән.* Ж. Кейекбаев. *[Хисмәтулла] сылтырап аккан йылгага иңкәйеп, .. һыуһыны канганса эсте.* Я. Хамматов.

**ИҢКӘЙЕШЕҮ** *к. урт. кар.* **иңкәйеү.** *Ауыл ята. Йылга ситтәрендә иңкәйешеп үҫкән муйылдар.* М. Тажи.

**ИҢКӘЙТЕҮ** *к.* Алға табан бөгөү, түбәнгә эйеү. *Башты иңкәйтеү. Кәүҙәне иңкәйтеү.* ■ *Ҡоҙагыйҙар һөйләшә-һөйләшә бер самауырҙы иңкәйткәндәрен һиҙмәй ҙә калдылар.* М. Хисмәтуллина.

**ИҢКӘЛЕҮ** *к.* Үтенес, ялыныс менән мөрәжәғәт итеү; үтенеү. *Мәгфүрә үҙенең башына нужа төшкән һайын .. ошо бай бисәгә иңкәлә.* Һ. Дәүләтшина.

**ИҢКӘНЛӘҮ** *к.* Алға табан ҡат-ҡат эйелеү, бер эйелеп, бер тороу. *Иңкәнләп атлау. Иңкәнләп еләк сүпләү.*

**ИҢЛЕ** *с.* Иңе киң (туҡымаға ҡарата). *Иңле тауар.* **Ике иңле тауар** иңе ғәҙәттәгенән ике тапҡыр киң булған метрлы тауар.

**ИҢЛӘП-БУЙЛАП** *р.* Бөтә булған киңлеген, иңен-буйын айҡау. *Иңләп-буйлап йөрөп сыгыу.* ■ *Донъя — даръя. Шундай диңгеҙҙәрҙе иңләп-буйлап йөҙөп барам мин.* Ш. Ғалин.

**ИҢЛӘҮ** *к.* **1.** Киңлеге менән ниҙеңдер бер ситенән икенсе ситенә тиклем етеү. *Бынауы миткал тәҙрәне аҙ генә иңләмәй.* / Бер ситенән икенсе ситенә тиклем үтеү. *Агиҙелкәй киң булһа ла, күп иңләнем йәш сакта* (Халыҡ йырынан).
**2.** *күсм.* Бөтә булған иркен киңлекте, бөтә киң майҙанды аймау. *Илдең иңен-буйын иңләп үттем, күрҙем тауын, ялан, диңгеҙен.* А. Игебаев. *Тау башын иңләп көтөү йөрөй.* И. Ғиззәтуллин.

**ИҢРӘНЕҮ** *к.* Бик ныҡ әсенеп, һыҙланып зарланыу; һыҡтау. *Ах, был күңелем нимәгә түҙә алмай иңрәнә, ниңә былай газапта, борсоуҙа тик мин генә?* З. Биишева.

**ИҢРӘТЕҮ** *к. йөкм. кар.* **иңрәү.** *Асып йыһан һугыштарын, агыҙҙылар кан диңгеҙен. Сикһеҙ аҙап, михнәт менән иңрәттеләр бар ер йөҙөн.* Т. Йәнәби.

**ИҢРӘШ** *и.* Күмәк иңрәү, күмәк иңрәгән тауыш. *Хәтерләйһең икән һин [иптәш] уларҙы, унда [үткәндәрҙә] иңрәш, унда күҙ йәш бар.* Т. Йәнәби.

**ИҢРӘҮ** *к.* Ҡайғы-хәсрәттән һыҙланып зар илау, һыҡтау. *Иңрәгән тауыш. Зар иңрәү.* ■ *Бар ине йырткыс батшаларҙың короллы көсө аҫтында иңрәп яткан саҡтар.* Ғ. Дәүләтшин. *Ике агам үлгән фронттарҙа, улар өсөн әсәм иңрәгән.* Д. Юлтый. *Шул ук минутта бисәләр иңрәүе, балалар илауы ишетелде.* Б. Хәсән. *Туҡмалғандар, аҫтар иңрәүе ишетелә һинең [Некрасов] йырҙарҙан.* Х. Кәрим.

**ИҢРӘҮЛЕ** *с.* Иңрәп сыҡҡан. *Иңрәүле тауыш.*

**ИҢРӘШЕҮ** *к. урт. кар.* **иңрәү.** .. *Әле булһа караңгылыкта иңрәшкән үҙенең тиңдәштәре өсөн һыҙланып укый [газетаны] Емеш.* З. Биишева.

**ИҢСӘ** *и. диал. кар.* **иң**[1].

**ИҢСӘР** *с.* Киң яурынлы. *Иңсәр кеше.*

**ИҢҺЕҘ** *с.* Иңе тар (туҡымаға ҡарата). *Иңһеҙ тауар.*

**ИҢҺЕҮ** *с. диал. кар.* **иңкеү 1.**

**ИҢҺЕҮЛӘҮ** *к. диал.* Иңкеүләнеү.

**ИҢ-ҺЫН** *и. йыйн. кар.* **буй-һын.**

**ИҢҺӘ** *и. кар.* **ин**[1].

● *Маңлайы киңдән төңөлмә, иңһәһе киңгә үрелмә.* Мәҡәл.

**ИҢҺӘЛЕК** *и. этн.* Тәңкә-мәрйен баҫып, сулпы-мәрйен менән аҫтан суҡлап, тотош иңде, яурынды ҡапларлыҡ итеп яһалған ҡатын-ҡыҙ биҙәүесе; елкәлек (толом өҫтөнән һалып арҡаға кейелә).

**ИҢӘТ** *и. диал.* Игәт.

**ИО́Н** [*рус.* ⟨ *гр.*] *и. физ.* Электр менән зарядланған атом йәки атомдар төркөмө. *Кислород иондары. Ион реакцияһы.*

**ИОНЛАШТЫРЫЛЫУ** *к. төш. кар.* **ионлаштырыу.**

**ИОНЛАШТЫРЫУ** *к. физ.* Иондар барлыҡҡа килтереү. *Газды ионлаштырыу.*

**ИОНЛАШЫУ** *к. физ.* Иондар хәленә килеү, хасил булыу. *Ионлашкан плазма.*

**ИОНЛЫ** *с. физ.* Составында иондар булған. *Ионлы берләшмә. Ионлы газдар.*

**ИОНОСФЕ́РА** [*рус.*] *и.* Атмосфераның ион һәм иркләе электрондары күп булған иң юғары өлөшө.

**ИП** *и.* **1.** Нимәнеңдер ыңғайы, көйө, уңайы, яйы. *Ҡулының ибе юк. Ибен табыу. Эштең ибен белеп эшләһәң генә эш була. Бынау балтаның бер ҙә ибе юк, яҙа саба.*
**2.** Тормоштоң тейешле тәртибе, йүне. *Донъям бар, тик ибе юк, ипләр инем, иренәм.* Х. Бикҡол. **Ипкә индереү** (*йәки* **килтереү**) 1) ҡулайға, ыңғайға килтереү; 2) тейешле тәртипкә килтереү. *Булмәне йыйыштырып, ипкә килтереү.* **Ипкә инеү** (*йәки* **килеү**) 1) ҡулайға, ыңғайға килеү. *Хәйретдин ипкә инмәгән ҡулын ҡагыҙ өҫтөндә тыныс тоторга тырышып хәл йыйҙы.* Я. Хамматов. *Сакай башын калкытты, тормак булды, аяктары ипкә килмәне.* Б. Бикбай; 2) тейешле тәртипкә килеү. *Ул [Ныязгол] уйҙарын тупларга тырышһа ла улар ипкә килмәне.* Һ. Дәүләтшина.
**3.** Кешенең килешле эш-ҡылығы, тәртибе, йүне. *Биргән дә генә кейәүең теремек түгел, сер һөйләр ҙә инем — ибе юк* (Сеңләүҙән). / Кешенең ирке, теләге, яйы. *Мине үҙенә буйһондормаксы, күндермәксе үҙенең ибенә.* С. Ҡудаш.

● *Иллелә иҫәр ҙә ипкә килер.* Мәҡәл.

**ИП-ЙӘП** *и. йыйн. кар.* **ип.** *Эштең бер ҙә ибейәбе юк.*

**ИПКЕН**[1] *и.* Ниҙеңдер тәьҫире, ситтән ҡағылған көсө; шауҡымы. *Ул түгайлыкка төштө. Битенә һыу буйында кискә табан була торган һалкындың ипкене бәрелде.* Ж. Кейекбаев. *Хәҙер бер тулкын килә лә, көслө ипкене менән йыуып,*

.. *упкынға алып китә.* Д. Юлтый. *Ирәйеп йөрөгән актарҙы, ниндәйҙер бер көстөң ипкене капыл ғына артка олактырҙы.* И. Көҫәпкол. *Диңгеҙ өҫтө караһыу күк төҫкә инеп, кыҙҙырылған таба шикелле, ипкен бәреп ята.* З. Биишева.

**ИПКЕН** [2] *и.* Түбәнгә киткән ауыш ер; иңкеү.

**ИПКЕНДЕРЕҮ** *к.* Ипкә индереү; ипле, кулайлы итеү. *[Атау] балта һабын һис ипкендереп тота алмай, сабайым тиһә, һап шыйып сығып бара.* Н. Мусин.

**ИПКЕНЕҮ** *к. һөйл.* Ипкә инеү; ыңғайға, кулайға килеү. *Кулы ипкенеп тора.* ■ *[Гөльямалдың] эшләгән эше лә ипкенмәне, кулынан төшөп торҙо.* Я. Хамматов.

**ИПКӘ-ҺАПКА: ипкә-һапка килеү** *шул ук* **ипкә килеү** (*кар.* **ип** 2).

**ИПЛЕ** *с.* **1.** Эшләүгә, файҙаланыуға кулайлы, йәпле. *Ипле балта. Кулы эшкә ипле.* / Нигеҙҙәр ыңғайына, яйына килешле; йәтешле. *Уҫаллыкка былар ниндәй ипле: гонаһ эшләп, була шайтан ғәйепле.* М. Ғафури. // *Колхоздағы кешеләр тора белә ипле.* Ф. Дәүләтшин.

**2.** Эш-кылығы, хәрәкәте киҫкен түгел. // *Ипле йөрөү.* ■ *Волжскийҙың һөйләшеүе лә, атлап йөрөүе лә бик ипле.* И. Абдуллин.

**3.** Әҙәп һаклаған, яҡшы мөғәмәләле, ихтирамлы. *Ипле кеше.* ■ *Ер һатыу, эсеү булһа — Йәнгирке .. Унһыҙ мәжлес юк. Ул үҙе лә кунак сакырырға, һыйларға бик ипле кеше.* Д. Юлтый. // *Егеттәр ҙә бит кыҙҙарҙың иплерәктәрен һайлай.* М. Сөндөклө. / Әҙәпте, ихтирамды сағылдырған. *Ипле төн.*

**ИПЛӘНЕҮ** *к. төш. кар.* **ипләү.**

**ИПЛӘП** *р.* **1.** Яйлы, уңайлы итеп; уңайлап, йәтешләп. *Ипләп баҫыу.* ■ *Өндәшкән кеше булмағас, Вася менән Айбулат тупһаға тағы ипләберәк ултырҙы.* һ. Дәүләтшина. / Киҫкен хәрәкәт күрһәтмәй, йомшаҡ кына итеп. *[Миңлебай] ипләп кенә урынынан торҙо.* В. Исхаков. *Был кеше туңкайҙы ла, ур эсендәге бәпкәләрҙе ипләп кенә эшләпәһенә йыя башланы.* В. Хангилдин. *Кинәттән күтәрелеп куркыткансы, акрын ғына, ипләп кенә аулау якшы.* Ш. Вабич.

**2.** Яйлап, һүҙ яйын аңлатып.— *Ипләберәк һөйлә, кыҙым, кайҙа китәләр?* К. Мәргән.

**ИПЛӘТЕҮ** *к. йөкм. кар.* **ипләү.**

**ИПЛӘҮ** *к.* **1.** Тейешле, кулайлы хәлгә килтереү; йәтешләү, кулайлау. *[Сафа Сөләймәнович] .. һирәк-мирәк кенә сәстәрен тараштырҙы, галстугын ипләне.* М. Тажи. *Тугыҙак саңгыларына күҙ ташланы, яурынына аҫкан мылтыгын ипләне.* Ә. Чаныш.

**2.** Төҙөк, ыңғай хәлгә килтереү; йүнәтеү. *[Староста:] һәр кем үҙенең өйө тирәһен таҙартһын, кәртә-коймаһын ипләһен.* Ж. Кейекбаев.

**ИПЛӘШЕҮ** *к. урт. кар.* **ипләү.**

**ИПОХОНДРИК** *с.* Ипохондрияға мөнәсәбәтле. *Ипохондрик хәл.*

**ИПОХО́НДРИЯ** [*рус.* ⟨ *гр.*] *и.* Сәбәпһеҙгә төрлө нәмәнән артык шикләнеү, күңел төшөнкөлөгөнә бирелеү хәле, күңел бошонколоғо. *Ипохондрия өйәнәге.*

**ИППОДРО́М** [*рус.* ⟨ *гр.*] *и.* Ат ярыштыра торған урын.

**ИПРИ́Т** [*рус.*] *и.* Тәндә шеш, йәрәхәт барлыкка килтерә торған ағыулы газ (һуғыш маҡсатында кулланыла).

**ИПТӘШ** *и.* **1.** Бер ерҙә йәки бер эштә булып, аралашып йәшәгән кешеләр (бер-береһенә карата). *Үҙең менән бергә йөрөгән, бергә ашаған, фронт ауырлыгын бергә кисергән иптәштәрең үлһә, ул онотолмай.* Д. Юлтый. *Берҙән-бер көн, иптәштәре менән һунарға йөрөгәндә, Түҙемголга урманда кунырга тура килгән* (Әкиәттән). / Эштә ярҙам итер, таяныс бирер кеше. *[Бакый:] Асатай кайтканы бирле миңә ҙур иптәш булды әле. Уны ауыл Советына председатель итеп куйғанда бик якшы булыр ине.* һ. Дәүләтшина.

**2.** Үҙ-ара яҡын мөнәсәбәттә булған бер күңелле кешеләр (бер-береһенә карата). *[Айҙар:] Дуҫыңдың, иптәшеңдең хатаһын төҙәтеү ул дуҫлыкты боҙоу түгел.* Р. Ниғмәти. *«Тәнзилә кәйенбикә,— тине уға карт,— кыҙымды һиңә төшөрөргә булдым инде. Өйөң иркен, үҙеңә иптәш тә булыр».* М. Тажи.

**3.** Рәсми рәүештә өндәшеү һүҙе, фамилияға кушып әйтелә. *[Байназар:] Беҙҙең башка тай типмәгән бит, иптәш Дауытов.* Б. Бикбай.

● *Иптәшең һукыр булһа, күҙеңде кыҫ.* Мәкәл.

**ИПТӘШ-АЛҒЫШ** *и. йыйн.* Якын дуҫ-иш, иптәштәр. *Көнһылыу .. иптәш-алгыш кыҙҙарын бер-бер артлы уҙгара ла, тәрән уйға тала.* М. Буранғолов.

**ИПТӘШЛЕК** *и.* Иптәштәрсә булған мөнәсәбәт. *Иптәшлеккә тогро калыр өсөн йәнебеҙҙе кыҙганманык беҙ.* С. Кудаш.

**ИПҺЕҘ** *с.* **1.** Файҙаланыуға кулайһыҙ, йәтешһеҙ. *Ипһеҙ балта. Кулы ипһеҙ.* ■ *Уның [Хәлим ағайҙың] гүмер буйы байҙарға йорт һалып, келәт бурап кәкрәйеп каткан бармактары кәләм тотоуға харап ипһеҙ.* З. Биишева. // *[Карт:] Бынауы ауырткан аякты ипһеҙерәк баҫып эйҙем.* М. Тажи.

**2.** Эш-кылығы, хәрәкәте абайлы, ипле түгел. *Ипһеҙ аҙым.* // *Ипһеҙ йөрөү.*

**3.** Әҙәпте, ихтирамды сағылдырмаған, тупаҫ, киҫкен. *Ипһеҙ һүҙ.* // *Ипһеҙ һөйләү.*

**ИР** *и.* **1.** Катын-кыҙ затына капма-каршы енестән булған кеше. *Ир заты.* // *Ир бала. Ир кеше.* ■ *Һәр шәһәрҙән, һәр ауылдан, кәрйәнән бары ла килгән: ир, катын-кыҙ, карты, йәше.* Ш. Бабич. *Ир булып та тыуган аҫыл ирҙәр үкенмәҫ ул ниңә тыуганга* (Халык йырынан). *Ир баламы, кыҙмы? Беҙ бит уға иң яраткан исем кушабыҙ.* Ғ. Сәләм. / Билдәле бер һөнәр, вазифаны күрһәткән һүҙҙәр менән килгәндә кайһы зат кешеһе икәнен белдерә. *Ир тәрбиәсе. Ир һатыусы.* // *Ир врач.* **Ир йораты** *мыҫк.* эшкинмәгән, булдыкһыҙ ир. ■ *[Бәгиҙә — Сөйөмбикәгә:] Мин .. берәүҙе генә өҙөлөп һөйҙөм, ә уның менән гүмер итергә насип булманы. Йәшлегемде ир йоратына бүлгеләнем дә «шаталак Сәгиҙә» исеме күтәреп калдым.* Ш. Янбаев.

**2.** Шул енестең малай, үҫмерлек йәшенән үткән кешеһе. *Ир йәшенә етеү.* ■ *Маңлайымда йыйырсыктар барын ир йәшенә етеп белмәнем.*

Я. Ҡолмой. *Йүнле генә ирҙәр дуҫ-иш һайлай, йүнһеҙ генә ирҙәр ил һайлай* (Халыҡ йырынан). *Ир ҡулы теймәгәнгә, йорт ҡаралтыһы туҙҙы. Ауыл ҡотһоҙланды.* Ә. Моратов. **Ир уртаһы** ысын ирҙәргә хас аҡылға эйә булған, тормош тәжрибәһе туплаған, физик яҡтан сыныҡҡан, көслө, ныҡлы, 40 йәштәр самаһындағы. *Ир уртаһы кеше. Ир уртаһына етеү. Ир уртаһы булыу.* ■ *Әнүәр ир уртаһына еткән кеше, матур итеп донъя көтә, балалар үҫтерә. Сайыр ағыҙыуҙа эшләй.* З. Ураҡсин. *Әмирханов .. гәжәп матур ир уртаһы кеше. Күҙҙәре бик үткер, тирә-яҡтағы бөтә нәмәне үтәләй тишеп ҡарай.* С. Агиш. **Ир булыу** ныңынып, үҫеп етеү; балиғ булыу. *Фәҡир кешеләрҙең балаһы нужа күрә-күрә ир була* (Халыҡ йырынан). **Ир етеү** малай, үҫмер йәшенән сығып, балиғ булыу. *Хәҙер Сәмиғулла ир етеп, ҡатын, бала-сағаһы менән үҙе донъя көтөп тора.* З. Биишева. **Ир ҡорона инеү** (*йәки* **ултырыу**) үҫмерлектән үтеп, мөһим, ҙур эш башҡарыр ирҙәр иҫәбенә инеү.

**3.** Батыр ғәйрәтле, булдыҡлы, тоғролоҡло һ. б. иң яҡшы сифаттарға эйә булған кеше. // *Ир егет. Ир ҡыҙҙар.* ■ *Меңәрләгән малды ҡыуҙылар, йөҙәрләп йәнде ҡыйҙылар, ил ағаһы ирҙәрҙең ҡуҙенә ҡурғаш ҡойҙолар.* Салауат Юлаев. *Дошманының сафын ярып сыҡҡан ир Салауат Юлай балаһы.* Х. Ғәбитов. *Салауаттай ирҙәр баш эймәҫ, аяҡ-ҡулына быуау һалһаң да* (Халыҡ йырынан). **Ирмен тигән ир** батыр, намыҫлы, шәп ир-егет. *Ирмен тигән егеттең әйтер һүҙе хаҡ булыр, күңеле уның аҡ булыр, яман эштән һаҡ булыр, ҡурҡаҡ булмаҫ ир-батыр, өркәк булмаҫ ир-батыр* (Ҡобайырҙан). **Ир бауыры** һәйбәт, хуш күңелле ир; ир аҫылы. / *с. мәғ.* Батыр, ғәйрәтле, тоғролоҡло, ғорур һ. б. яҡшы ирҙәргә хас сифаттарға эйә булған. *Ир йөрәкле. Ир намыҫлы. Ир холоҡло. [Фатима:] Ир һынамаҡ бер бурыс тип, үҙеңдең һүҙ башлауыңды көттөм, рәхмәт, ир намыҫлы икәнһең [Ҡадир].* Б. Бикбай. *Дан йөрәкле, ир намыҫлы улдар үҫтергән Урал.* Ҡ. Даян. **Ил ирҙәре** ил яҙмышын ҡулда тотҡан ирҙәр. **Ир аҙаматы** (*йәки* **арыҫланы, солтаны**) ысын ир исеменә лайыҡ кеше. *Егет түҙмәгән: — Бына минең һунар атымды ал .. ҡошомдо ла...— тигән.—Һай, уҙаман егет, ир аҙаматы икәнһең [тигән Таңатар].* Ә. Вахитов. .. *Һай түрәкәйгенәһе, шул микән ни ирҙең солтаны* (Халыҡ йырынан).

**4.** Ҡатын менән никахта булған, өйләнгән кеше (ҡатынына ҡарата). *Ире бар. Ире юҡ. Ир итеү. Ир менән тороу.* ■ *Ырыҫ еңгәнең ире Ҡотлоҡай асыуынан ултырған урынында түҙә алмай.* Ғ. Дәүләтшин. *Ул [Сәгиҙә] башын түбән эйеп, .. ирем хаҡында берәр нәмә һорашаймыммы икән һуң?» тип уйланып ултырҙы.* М. Тажи.

**5.** *купл.* Ир-ат өсөн тәғәйенләнгән нәмәне күрһәткәндә ҡулланыла. *Ирҙәр кейеме. Ирҙәр эше. Ирҙәр ятағы.*

♦ **Уй, иреңде** *мыҫҡ.* кешенең берәй эш ҡылығынан көлөп, мыҫҡыллап әйтелә. *Уй, иреңде,— тине Булат [Тимергә],— сәй тигәс тә ниндәй ырғып төшкән булды! Әйтерһең, эшемде ҡырып сәй эсә торған кеше.* Б. Бикбай. *Уй, иреңде!..— Мәғфиә әбей, көлөп, һыңар усы менән ауыҙын ҡапланы.— Әйтәм, егет сағыңда эшемде ҡырҙың инде.* Б. Бикбай. **Һай, иреңде** ир-аттың берәй эшен, ҡылығын хуплап, ҡеүәтләп әйтелә. *Һай иреңде, ат өҫтөндә нисек ултыра ла, юрғаһын ҡайһылай оҫта юрғалата.*

● *Алтын башлы бисәнән баҡа башлы ир артыҡ.* Әйтем. *Ат башына эш төшһә, ауыҙлыҡ менән һыу эсер; ир башына эш төшһә, итеге менән һыу кисер.* Мәҡәл. *Атың барҙа юл таны, ашың барҙа ир таны.* Әйтем. *Ат юлда, ир яуҙа һынала.* Әйтем. *Булаһы ир алты йәшендә баш-мын тиер, булмаҫ ир алтмышта ла йәшмен тиер.* Мәҡәл. *Иҙел кисмәй — ир булмаҫ.* Мәҡәл. *Иле барҙа — ир хур булмаҫ, ир барҙа — ил хур булмаҫ.* Мәҡәл. *Йәш ирҙең хыялы йәш, ҡарт ирҙең теләге йәш.* Әйтем. *Ирмен тигән ир эсендә эйәрле, йүгәнле ат ятыр.* Мәҡәл. *Өйөрөн ташлаған малды бүре алыр, илен ташлаған ирҙе гүр алыр.* Әйтем. *Күлде ҡамыш матурлай, ирҙе намыҫ матурлай.* Әйтем. *Яҡшылыҡҡа яҡшылыҡ һәр кешенең эшелер, яманлыҡҡа яҡшылыҡ ир кешенең эшелер.* Мәҡәл.

**ИРАДА** [*ғәр.*] *и. иҫк.* Ниәт, теләк. *Бикйән эргәһендәге Бәйембәт ҡартҡа .. үҙенең күрәшергә ирадаһы барын белдерҙе* (Әкиәттән).

**ИРАН** *и.* Иран дәүләтенең нигеҙҙә фарсыларҙан торған халҡы һәм шул халыҡтың бер кешеһе. *Иран ҡатыны. Иран халҡы.*

♦ **Иран телдәре** Һинд-Европа телдәренең семьяһына ингән туғандаш телдәр төркөмө (фарсы, афған, тажик, осетин, курд, талыш, тат һ. б.). **Иран** телле иран телдәренең береһендә һөйләшкән. *Иран телле халыҡтар.* ■ *Тарихта билдәле булғанса, иран телле боронғо алан кәбиләләре беҙҙең эраның II—III быуаттарында Көнъяҡ Уралда, Ағиҙел, Ашҡаҙар йылғалары бассейнында йәшәгән.* Ж. Кейекбаев.

**ИРАНИСТ** [*рус.*] *и.* Иранистика буйынса белгес.

**ИРАНИСТИКА** [*рус.*] *и.* Иран телдәрен һәм культураһын өйрәнгән фәндәр.

**ИР-АРЫҪЛАН** *и.* Ғәйрәтле, ҡыйыу, батыр ир. *Ә башҡорт халҡының улдары ҡаһарманлыҡ традицияларына тоғро булды, күктә бөркөт, ерҙә ир-арыҫлан булып һуғышты.* «Совет Башҡортостаны», 1966, 9 май. *Ир-арыҫлан булһаң, иш күрәләр, ҡайһы ғына ергә барһаң да* (Халыҡ йырынан).

**ИР-АТ** *и. йыйн.* Ирҙәр. *[Әсә — ҡыҙына:] Йөрөйһөң дә тағы шунда! .. Ир-ат араһына барып йөрөргә ир бала булдыңмы? Килешмәгәнде.* Һ. Дәүләтшина.

**ИРБАСЫ** *и. диал.* Абаға.

**ИР-БАТЫР** *и.* Ғәйрәте, батырлығы менән танылған ир; ир-арыҫлан. *Бүгәсәүгә ҡушылып, ир-батырға ҡуш булып, шул теләкте яулайыҡ.* Салауат Юлаев.

**ИРБӘҘЕ** *и. ҡар.* **ирәүән** [2].

**ИРГЕ** [*рус.*] *и.* Роза һымаҡтар ғаиләһенә ҡараған ағас һәм ҡыуаҡтар төрө СССР-ҙа уның түңәрәк япраҡлы төрө Кавказда, Ҡырымда үҫтерелә, йәшелләндереү өсөн ултыртыла, бал бирә. *Ирге емеше.*

**ИРГӘ** *и. диал.* Ниргә.

**ИРГӘЙЕЛ** *и.* Бик бәләкәй кәүҙәле кеше; кәрлә. *Урман батыр ишекте аскан. Ҡараһа, алдында үҙе бер ҡарыш, һаҡалы мең ҡарыш бер иргәйел ҡарт тора, ти* (Әкиәттән).

**ИРГӘНӘК** *и.* **1.** Бәләкәй кәүҙәле ир; иргәйел, кәрлә.

**2.** *һөйл.* Ысын ир тип әйтерлек булмаған ир-ат; ир йораты. *[Аһылбикә:] Ир түгел һеҙ, бары иргәнәктәр, һаҡал-мыйыҡ аҫҡан ҡатындар.* Б. Бикбай.

**ИРҘӘҮКӘ** *и.* Холҡо ирҙәрсәрәк булған ҡатын-ҡыҙ. *Уны [Ғәлимәне] күрә алмаған, ирҙәүкә тип әйткән кешеләр ҙә бар ине.* З. Шәрҡи.

● *Ирҙәүкә булһа — ҡатының яу; ҡатынша булһа — ирең яу.* Мәҡәл.

**ИРҘӘҮКӘЛӘНЕҮ** *ҡ.* Ирҙәр кеүек ҡыланыу. *[Әкбәр:] Бына әле бер көндө ҡыҙҙы бер аҙ ороштом, малайҙар менән ҡыҫҡа ыштан кейеп, футбол уйнаған өсөн. Бынан һуң ирҙәүкәләнеп йөрөмә, тинем.* А. Таһиров.

**ИР-ЕГЕТ** *и. йыйн.* Батыр, булдыҡлы, ҙур эштәргә һәләтле, көслө, ғәйрәтле ирҙәр. *Ир-егеткәй ҡайҙа йөрөһә лә ҡылған эше уның хаҡ булыр* (Халыҡ йырынан). *Егет тә булһа, ҡыйыу булһын, ир-егетмен тигән сағында* (Халыҡ йырынан).

● *Ир-егеттең аҫылы ил эшендә танылыр.* Әйтем.

**ИР-ЕГЕТЛЕК** *и. йыйн.* Ысын ирҙәргә хас батырлыҡ, намыҫлыҡ һ. б. сифаттар. *Юйылһа ла ир-егеттең исеме ир-егетлек ҡалмай билдәһеҙ.* Р. Бикбаев.

**ИРЕГЕҮ** [1] (ирек*ә*) *ҡ.* **1.** Эшһеҙ, хәрәкәтһеҙлектән йонсоу, ялҡыу. *Тук эсәге тулышып, эшһеҙлектән ирегеп ятҡан ике бай.., ҡырпаҡ ҡар яуғас, буре һуғар аттарын менеп, тазы эттәрен, ағай-энеләрен эйәртеп, Ирәндеккә һунарға сыҡҡан.* Н. Иҙелбай. *Сәфәр ҡылдым дәрүишлектән түгел, түгел ирмәк күреп, ирегеп.* М. Илбаев. **Эш ирегеү** эшһеҙлектән ялҡып, юк-бар нәмә менән булыу. *— Гөбөрнатор тигәндәренең эше иреккән икән, мынау яуында йөрөмәһә,— тине Ишбулды.* Ж. Кейекбаев.

**2.** Иреккә сығып рәхәтләнеү, иреккә кинәнеү. *Ирегеп китеү.* ■ *Мохтажы юк, бераү күңеле көр, ни эшләргә белмәй ирегә.* Х. Ғәбитов.

● *Иреккән бала атаһының һаҡалы менән уйнар.* Мәҡәл.

**ИРЕГЕҮ** [2] (ирек*ә*) *ҡ. диал. ҡар.* **ирәйеү** 1.

**ИРЕГЕҮ** [3] (ирек*ә*) *ҡ. диал.* Иренеү.

**ИРЕК** [1] *и.* **1.** Бер кемгә бәйле булмаған, бер кем борсомаған, азат, иркен хәл; шәхси азатлыҡ. *Ирек бар. Ирек юҡ. Ирektә йәшәү.* ■ *Беҙҙең көндәр быңдағы ирektә иҫереп үтә. Һис бер тыныслыҡһыҙлаған, борсоған кеше юк.* Д. Юлтый. *Бәхет хаҡы күп ғүмерҙәр тора, ҡәҙерле ул ирек шул ҡәҙәр.* М. Хәй. *Шунан батыр уйлай: «Минең иркем бар, менергә айғырым бар. Нишләп әле мин бында ятам?* (Әкиәттән).

**2.** Кешенең үҙ маҡсаты, үҙ теләге менән эшхәрәкәт ҡылыу мөмкинлеге; ихтыяр. *Ирке бар. Ирке юк. Ирек биреү.* ■ *[Уралтау:] .. Алтыны ла үҙемдә, баҡыры ла үҙемдә, ни бирергә теләһәм, шуны бирер иркем бар.* Р. Ниғмәти. *Ҡолой кантонды ла бай тиҙәр .. үҙ хөкөмө уның үҙ ҡулында, ни ҡылһа ла ирке бар тиҙәр* (Халыҡ йырынан). **Ирек биреү** *гәҙәттә юкл. ф.* берәр нәмә эшләүгә юл ҡуйыу, мәшәҡәтләнеү; форсат биреү. *Йоҡларға ирек биреү. Һүҙ һөйләргә ирек биреү.* ■ *Ҡоҙа,— тине, ул миңә ҡаршы әйтергә генә түгел, тын алырға ла ирек бирмәй.— Бик ваҡытлы, бик урынлы әләктең. Киттек..* И. Абдуллин. *[Сурагол] ҡанға буялған ҡулдары менән стенаға тотонмаҡсы булһа ла хәлһеҙ кәүҙәһе ирек бирмәне.* Т. Хәйбуллин. **Ирек ҡылыу** ҡаршылыҡ күрһәтмәй, үҙ теләгәнен эшләтеү, ихтыяр ҡуйыу. *Һөйөп менгән ҡола атым, китһәң дә ирек ҡылайым, ҡайтһаң да һөйөп менәйем* (Хикәйәттән). / Күңел теләге, ихтыяр. *Үҙ ирке. Үҙ ирке менән. Үҙ иркенән тыш. Үҙ иркенә ебәреү. Үҙ иркенә ҡуйыу. Үҙ иркең менән эшләү.* ■ *.. Ҡуй нәпсене иркенә, .. тик уны выждан ебе менән тышаула, ҡасмаһын.* Ш. Бабич. *Егет кенә, меҫкен, ни хәл итһен, юл булмағас уның иркенә* (Халыҡ йырынан). **Үҙ иркең** *йәки* **үҙ иркең**дә кемдеңдер эшенә ҡыҫылырға, ҡатышырға теләмәгендә белдереп әйтелә. *Уҡырға китәһеңме, эшкә төшәһеңме — үҙ иркең.*

**3.** Билдәле бер синыф йәки йәмғиәттең ижтимағи-политик тормошонда политик һәм экономик иҙеү, ҡыҫыу һ. б. төрлө сикләүҙәр булмау; хөрриәт, азатлыҡ. *Ирек һөйөүсе. Ирек өсөн көрәшеүсе. Ирек алыу. Ирек биреү. Иреккә сығыу. Ирektә йәшәтеү.* ■ *Батша булһа ла Бүгәсәү.., һанат башын ҡыя икән, ирек алып килә икән, ер, урман, һыу бирә икән, башҡортҡа ана шул еткән.* Салауат Юлаев. *Большевиктар әйтә: «Коллок бөтһөн, ярлы халыҡ рәхәт йәшәһен, ирек көнө тыуып был донъяға, тигеҙ яҡты көндәр йәшәһен!»* Ш. Бабич. *Октябрҙән ирек өсөн көрәш ярып сыҡтыҡ донъяға* Ғ. Амантай. *Дошман килһә, ерҙәреңде тартып алыр .. илең бөтөр, иркең бөтөр, ниең ҡалыр?..* Р. Ниғмәти.

**4.** Тотҡонлоҡта, һаҡ аҫтында булмаған, азат хәл. *Иреккә сығарыу. Ирektә йөрөтөү.* ■ *Уның [Мөхәррәмдең] иреккә сығыуына бер йылдан ашыуыраҡ ҡына ваҡыт үтте, ә ул бына тағы ла суд залына баҫты.* Х. Зарипов. *Түҙемголдоң ҡушыуы буйынса .. зиндандағы тотҡондарҙы иреккә сығарғандар* (Әкиәттән).

**5.** *ҡусм.* Кеше һ. б. нәмәләрҙең мәшәҡәте, оронсоғо булмаған аулаҡ урын, иркен ер; сәхрә. *Ирektә йәшәү. Мал иреккә сыҡты.* ■ *Зөлҡәрнәй менән Зөлхизә Ирәндектә, үләндәргә үрелеп үҫкән тәбиғәт балаларындай, ирektә йәшәй биргән.* Н. Иҙелбай.

**6.** (*баш хәреф менән*) Ир-ат исеме.

● *Бүрек баҙарҙа һатылһа ла ирек баҙарҙа һатылмай.* Мәҡәл. *Ҡайҙан колаҡ сығарһа ла ҡаҙансының ирке бар.* Мәҡәл.

**ИРЕК** [2] *и. этн.* Тире иләгәндә уны йомшартып алыу өсөн махсус әҙерләнгән әсетмә (ғәҙәттә әсе ҡатыҡҡа, эркеткә арыш оно, он әреһе һалып әсетелеп әҙерләнә). *Тирене иреккә һалыу.* **Ирек ағасы** асалы ағасҡа тимер беркетелеп яһалған тире иләү ҡорамалы. **Ирек ашау** ошо әсетмәлә ятып йомшарыу, бешеләнеү (тирегә ҡарата).

**ИРЕКЛЕ** *с.* **1.** Бер кемгә буйһонмаған, үҙ ихтыяры менән йәшәй торған, азат. *Ирекле кеше. Ирекле йәштәр. Ирекле булыу.* ■ *Ирекле ҡоштарҙың йәйге таңға кинәнеп йырлашыуҙары Гөлйөҙөмдөң йөрәген өҙҙөләр.* Һ. Дәүләтшина. *Ирек. Ысын мәғәнәһе менән ирекле кеше булыуҙан да, кешегә ҡол булмауҙан да бәхетлерәк хәлдең булыуы мөмкинме һуң?!* З. Биишева.

**2.** Үҙ теләге, үҙ ихтыяры менән эш итеү мөмкинлеге булған. *Сәйетҡужаның әле Гөлйөҙөм өҫтөнән тағы өс ҡатын алырға ирекле икәне тураһында һөйләйҙәр.* Һ. Дәүләтшина. **Ирекле көндән** үҙ иркең, үҙ теләгең менән эш итеү мөмкинлеге була тороп, бар көйө. *[Шәкирә:] Шыңшыһаң да шул, ирекле көнөмдән үҙ балаларымдан айырым йәшәү бик рәхәт тиһеңме ни?* Ф. Иҫәнғолов.

**3.** Ижтимағи-политик һәм экономик тормошонда иҙелеп, ҡоллоҡта йәшәмәгән, бойондороҡло булмаған. *Ирекле илдәр. Ирекле халыҡтар.* ■ *Һин матурһың, байһың, һин батырһың, .. һин ҡол түгел хәҙер, һин ирекле, Башҡортостан, тигән илгенәм.* Р. Янбулатова. / Иҙелеү, эксплуатацияны белмәгән илдәрҙә, халыҡтарҙа була торған, шуларға хас. *Ирекле тормош. Ирекле хеҙмәт.*

**4.** Тотҡонлоҡ хәлендә булмаған, әсир түгел, азат. *Ирекле булыу. Ирекле итеү.* ■ *[Түҙемгол:] Әбей, хәҙер һинең дүрт яғың ҡибла. Ошо болотҡа ултырып, теләгән ереңә кит, һин хәҙер ирекле!* (Әкиәттән).

**5.** Айырым кешеләрҙең, массаның үҙ теләктәре, үҙ ихтыярҙары менән ойошторола торған һәм ойошторолған. *Ирекле спорт йәмғиәте. Ирекле халыҡ дружиналары.* ■ *Мәҙрәсәлә уҡыуҙар башланып китеү менән, шәкерттәрҙең төрлө ирекле түңәрәктәре эшкә башлай.* С. Ҡудаш. *«Урожай» исемле ирекле спорт йәмғиәте физкультура кисәһе үҙгарҙы, .. ярышта еңгәндәргә разряд значоктары .. бирелде.* «Совет Башҡортостаны», 1985, 11 апрель.

**6.** Һәр кемдең теләгенә ҡуйылған, һис кемгә тыйылмаған; ихтыяр. *Ирекле эш.* **Ирекле тәржемә** тексттың төп нөсхәһе һүҙмә-һүҙ тура килмәгән, мәғәнәүи яғынан тура килтерелгән яҡынса тәржемә. *Ирекле тәржемә итеү. Ирекле тәржемә яһау.*

● *Ил икмәге ирекле, эшләп алһаң — кимекле.* Мәҡәл.

**ИРЕКЛЕ-ИРЕКҺЕҘҘӘН** *р.* Теләк булмаған көйгә, ирекһеҙ көндән. *[Эт] ирекле-ирекһеҙҙән .. ҡапҡа төбөндәге ояһына инеп китте.* Һ. Дәүләтшина.

**ИРЕКЛЕК** *и.* **1.** Теләгеңә, маҡсатыңа ярашлы нәмә, теләһәң шуны эшләй алыу мөмкинлеге; ирек. *Уның [Ямалдың] йәшлеге кулактарҙа батраклыҡта йөрөп үткән, тормош рәхәтлеген татымаған, күңел иреклегенән мәхрүм булған.* М. Тажи.

**2.** Политик һәм экономик яҡтан бойондороҡһоҙ хәл; азатлыҡ, ирек, ирекләлек. *Иреклек алыу. Иреклек яулау.* ■ *[Хыялбай:] Бына хәҙер иреклектәр алырбыҙ, һатылған һәммә ерҙе ҡайтарырбыҙ.* Ш. Бабич.

**3.** Тотҡонлоҡтан азат хәл. *Иреклеккә сығыу.*

**4.** Билдәле бер өлкәлә сикләүһеҙ, тыйыуһыҙ һәм ҡаршылыҡһыҙ эш итә алыу мөмкинлеге. *Матбуғат иреклеге. Һүҙ иреклеге. Сауҙа иреклеге.*

**ИРЕКЛЕЛЕК** *и.* **1.** *кар.* **ireклек.**

**2.** *филос.* Тәбиғәт һәм йәмғиәттең үсеш закондарын танып белеү нигеҙендә кешенең үҙ теләктәрен һәм маҡсаттарын тормошҡа ашыра алыу мөмкинлеге. *Иреклелек зарурлыҡты аңлап белеүҙән һәм уны практикала файҙаланыуҙан тора.*

**ИРЕКЛЕНӘН** *р.* Мөмкинлеге булған көйө; ирекле көндән.

● *Ирекленән ас торған — ирекһеҙҙән үҙенә кәбер ҡаҙыр.* Мәҡәл.

**ИРЕКЛӘНЕҮ** *к. төш. кар.* **ирекләү.** *Ирекләнгән тире.*

**ИРЕКЛӘҮ** *к.* **1.** Тирене иреккә һалып әсетеү. *Тире ирекләү.*

**2.** *диал. кар.* **ирәкләү 1.**

**ИРЕКТЕРЕҮ** *к. йөкм. кар.* **ирегеү** [1].

**ИРЕКҺЕҘ** *с.* **1.** Политик һәм экономик үҙ аллығы булмаған; бойондороҡло. *Ирекһеҙ ил. Ирекһеҙ итеү. Ирекһеҙ булыу.*

**2.** Эше, тормошо берәй төрлө сикләнгән, үҙ ихтыярына эйә булмаған; мәжбүри. *Яңғыҙ ғына башым, юҡ юлдашым, сит илдәрҙә йөрөйөм ирекһеҙ* (Халыҡ йырынан). / Үҙ ихтыяры менән эш итеү мөмкинлеге булмаған. *Мин үҙемсә йәшәргә лә ирекһеҙ. // Ҡурҡыныс уйҙар килеп баҫҡас, ирекһеҙ баш бөгәм.* Ш. Бабич.

◆ **Ирекһеҙҙең көнөнән** *йәки* **ирекһеҙ көндән** *кар.* **көн** [1].

**ИРЕКҺЕҘҘӘН** *р.* Теләгеңдән тыш, ирекһеҙ (2 мәғ.) көйө. *Ирекһеҙҙән ил-йортонан биҙгән .. Зөлкәрнәй менән Зөлхизә Ирәндектә иректә йәшәй биргән.* Н. Иҙелбай.

**ИРЕКҺЕҘЛӘҮ** *к.* Кешенең теләген, ихтыярын сикләү, кешегә баҫым яһау; көсләү. *Бармаҫҡа ҡырҡалашҡан Гөлйөҙөмдө Мөхәмәтғәле ирекһеҙләп, йәнә аш бешерергә алып китте.* Ф. Иҫәнғолов.

**ИРЕКӘЙ** *и.* Таныш түгел ир, ят ир. *Таңатар .. теге ирекәй менән һөйләшеп китте.* Ә. Вахитов.

**ИРЕМТӘЛ** [1] *и. кар.* **ялҡау.** *Уй, иремтәл, торорға ваҡыт, төш етеп килә бит инде.* «Ағиҙел» 1970, № 4.

**ИРЕМТӘЛ** [2] *с. диал.* Иреүсән.

**ИРЕМТӘЛЛЕК** *и. кар.* **ялҡаулыҡ.**

● *Алдынғылыҡ — тәхеткә, иремтәллек — ләхеткә.* Мәҡәл.

**ИРЕН** *и.* Ауыҙҙың аҫтын-өҫтөн ҡымтып торған хәрәкәтсел өлөшө. *Аҫҡы ирен. Өҫкө ирен. Ҡалын ирен. Ирен ҡымтыу. Ирен ослайтыу.* ■ *Ҡыҙыл ирен бер йылмайһа, хоҙай шаһит, бөтә фекер әсир төшөр.* Ш. Бабич. **Ирен өндәре** *лингв.* ирен ҡатнашлығында әйтелгән өндәр. **Ирен тартыу** ирендең берәй өлөшө үҙенән-үҙе ҡалтыранып ҡыбырлау (ырым буйынса, кеше менән һөйләшеүгә йәки күстәнәс ашауға була, имеш, тип әйтелә). **Ирен турһайтыу** ирендәрҙе тумпайтып, асыу, үпкә белдереү. *Сәхибә туташ һаман, үпкәләгән бала шикелле, иренен турһай-*

*тып йөрөй.* З. Биишева. **Китек ирен** өстән кителеп торған ирен (тыумыштан булған зәғифлек).

● *Илдә булһа, иренгә тейә.* Мәҡәл.

**ИРЕНДЕРЕҮ** *к. эйһ. ф. ҡар.* **иренеү**. *Ирендереп тора.* ■ *Ҡараңғы мунса эсендә оҙаҡ ултырғы килмәй башланы. Ирендерә, кояш тарта.* Ю. Юлтый.

**ИРЕНЕҮ** *к.* Ҡуҙғалырға, ниҙер башҡарырға ауырһыныу; йыбаныу. *Иренеп тороу.* ■ *Миңлебикә, утын килтерергә иренеп, мунсаны һалам менән яккан* (Әкиәттән).

● *Эшләргә иренгән көлөр ерҙә көрһөнгән.* Мәҡәл. *Ялҡау уйларға ла иренә.* Әйтем.

**ИРЕНЛЕ** *с.* Ирене ҡалын.

♦ **Ике иренле таж** (*йәки* **сәскә**) *бот.* аҫлыөҫлө булып, иренгә оҡшап торған таж япрағы.

● *Ат иренле, ир моронло килһен.* Әйтем.

**ИРЕНЛӘШЕҮ** *к. лингв.* Ирендәр ҡатнашлығында әйтелеү (телдәге ҡайһы бер өнгә ҡарата). *Иренләшкән өндәр. Иренләшкән һуҙынкылар.*

**ИРЕНСӘК** *с.* Тиҙ ҡуҙғалмай, ихлас эшләмәй торған (кешегә ҡарата); ялҡау. *Иренсәк бала.*

● *Иренсәк ике эшләр.* Әйтем.

**ИРЕТЕЛЕҮ** *к. төш. ҡар.* **иретеү** 1, 2. *Иретелгән май.*

**ИРЕТЕҮ** *к.* **1.** *йөкм. ҡар.* **иреү**[1] 1, 2. *Май иретеү. Тоҙ иретеү. Шәкәрҙе иретеү. Ыҫмала иретеү. Иретеп алыу. Иреткән май.* ■ *Ҡояштың һаран нурҙары япрактарға төшкән ҡырауҙы иреткән..* Ф. Әсәнов. *Көтмәгәндә кистән ҡар төштө бик ваҡытһыҙ, иртә. Иретергә уны ҡояштың бер ҡарауы етә.* М. Кәрим.

**2.** Юғары температура тәьсирендә металл алыу; металл ҡойоу. *Баҡыр иретеү заводы. Ҡорос иретеү. Тимер иретеү.* ■ .. *Һыу сыйын ҡойоу, ҡорос иретеү, домна, мартен цехы хаҡында бара.* М. Тажи. *[Электр] кукта тимер йөрөтә, ерҙә ҡорос иретә, төндә таңдар аттыра.* Ғ. Амантай. *[Сакайҙың] тотош тәне һыҙлай, башы, ҡурғаш иретеп ҡойған һымаҡ, ауыр, туң.* Б. Бикбай.

**3.** *эйһ. ф. ҡар.* **иреү**[1] 1, 2. *Ныҡ иретә. Кисә көслө иреткән.*

**4.** *күсм.* Кешелә нескә тойғолар уятыу, күңелгә рәхәтлек биреү, күңелде йомшартыу. *Йәнде иретеү. Күңелде иретеү. Йөрәкте иретеү.* ■ *Аҙнаголо ла тап Ирйегеттең үҙе бит. Эс-бауырыңа инеп килә. Бер ҡарауҙа һине тамам иретеп ҡамырҙан йомшаҡ яһап ҡуя.* З. Биишева. *Эй, Зөләйха, бер йылмайһаң, иҫертәһең, бер минутта биш туңдырып, биш иретәһең.* Ш. Бабич.

● *Аш ташты иретә.* Мәҡәл. *Йылы һүҙ йәнде иретә.* Әйтем.

**ИРЕТЕҮСЕ: ҡорос иретеүсе** ҡорос иретеүҙә эшләгән эшсе.

**ИРЕТКЕС** *и. махс.* **1.** Айырым матдәләрҙе иретә торған ҡушылма. *Цех йыл ярым эшләй. .. Ул төрлө иреткестәр, үҫемлектәрҙе ҡороткостарҙан һаҡлау матдәләре сығара.* «Совет Башҡортостаны», 1966, 18 февраль.

**2.** Ниҙелер иретеү өсөн хеҙмәт иткән ҡорамал. *Балауыҙ иреткес. Ыҫмала иреткес.*

**ИРЕТМӘ** *и.* **1.** Бер нисә металды бергә иретеп яһаған ҡушымта. *Баҡыр менән алтын иретмәһе.*

**2.** Ниндәй ҙә булһа бер матдә һалып иретелгән шыйыҡлыҡ. *Тоҙ иретмәһе.*

**ИРЕҮ**[1] *к.* **1.** Йылылыҡ, эҫелек тәьсирендә шыйыҡ хәлгә килеү. *Боҙ ирей. Май ирей. Ҡурғаш ирей. Шәкәр ирей.* ■ *Яҙғы ҡояшта ирегән ҡар һыуҙары һарай түбәһенән тамсылап ағып тора.* М. Тажи. **Иреү нөктәһе** *физ.* билдәле бер матдәне, металды иретеү температураһы.

**2.** *күсм.* Рәхәтләнеп, йомшарып китеү (тәнгә ҡарата); иҙрәү. *Тән ирей. Йылыға иреп, йоҡомһорау.* / Күңелдә рәхәтлек, кинәнес тойоу. *Май кеүек иреү.* ■ *Матур һындар, матур ҡыҙҙар, .. һеҙҙе күреп, йәмгә сумып, киттем иреп.* Ш. Бабич. / Кинәнес, ризалыҡ һиҙеү; йомшарыу. *Йән ирей. Күңел ирей.*

♦ **Ирегән май** *шул уҡ* **һары май** (*ҡар.* **май** 1).

**ИРЕҮ**[2] *с.* Иреп торған, туңмаған, ҡатмаған. *Иреү ҡар. Иреү май. [Батырҙар] утын өйөп сыҡҡан, шунан бер мискә иреү ыҫмала түгеп, ут төртөп ебәргән* (Әкиәттән). **Иреү көн** ҡар иреп ятҡан епшек көн.

**ИРЕҮСӘН** *с.* Ирей торған. *Иреүсән матдәләр.*

**ИРЕШ**[1] *и. тук.* Буйлыҡтың көрөҫтән артҡы сөйгә тиклемге өлөшө. *Ирош буйы. Ирош ебе. Ирош таяғы.*

**ИРЕШ**[2] *и.* Әрләш, талаш. *Ирош сығарыу. Ирош сығыу.*

**ИРЕШЕЛЕҮ** *к. эйһ. ф. ҡар.* **ирешеү**[1] 1, 2. *Иген үҫтереүҙә ҙур уңышҡа ирешелде.* ■ .. *Үткерләнгән ҡорал ярҙамында эшләгәндә иң юғары һөҙөмтәгә ирешелә.* С. Агиш.

**ИРЕШЕП-ТАЛАШЫП** *р.* Ирош-талаш менән, әрләшеп. *Ирешеп-талашып йәшәү.* ■ *[Председатель — Ямалға:] Теләһәң, ирең менән үҙең дә кит. .. Унда һеҙгә ирешеп-талашып тороу түгел, һөйләшергә лә ваҡыт булмаҫ.* М. Тажи.

**ИРЕШЕҮ**[1] *к.* **1.** Көс, тырышлыҡ менән ниҙеңдер ғәмәлгә ашыуына килеү, нимәгәлер өлгәшеү. *Байлыҡҡа ирешеү. Дәрәжәгә ирешеү. Еңеүгә ирешеү. Маҡсатҡа ирешеү. Моратҡа ирешеү. Теләккә ирешеү. Уңышҡа ирешеү.*

**2.** Ниндәйҙер хәлдең ғәмәлләнешенә барып етеү; өлгәшеү. *[Тимергәлә:] Шул көндәргә тиҙерәк ирешһәк ине инде.* Һ. Дәүләтшина.

**3.** Тейешле урынға барып етеү, тапшырылыу, барып өлгәшеү. *Хат әйәһенә ирешкән.*

♦ **Бәхетенә ирешеү** исем ҡылым формаһынан һуң килеп, ниндәй ҙә булһа эш-хәлгә ҡыуаныс белдергәнде аңлата. — *Һеҙҙе күреү бәхетенә ирешермен тип кем уйлаған.*

**ИРЕШЕҮ**[2] *к.* Һүҙгә килешеү, әйтешеү; әрләшеү. *Ирешеп китеү.* ■ *[Шәһәрбаныу:] Сәйетҡол бисәһе лә кеше булып һүҙ һөйләгәс, ҡалайтып ирешмәй тораһың.* Һ. Дәүләтшина.

● *Яҡшы килен күрешеп һөйләшер, яман килен ирешеп һөйләшер.* Мәҡәл.

**ИРЕШТЕРЕҮ**[1] *к.* **1.** Тейешле урыны йәки кешеһенә еткереү, еткереп тапшырыу. *Сәләм ирештереү.* ■ *[Ҡарағол:] Һин, Мозой,.. кантон тирәһендә йөрөштөр. Тегеләй-былай хәбәр булһа, беҙгә ирештер.* Д. Юлтый.

**2.** Ниндәйҙер эш-хәлгә өлгәшеү. *Бәхеткә ирештереү. Маҡсатҡа ирештереү. Уңышҡа ирештереү.*

**ИРЕШТЕРЕҮ** [2] *ҡ. ҡар.* **әрләштереү.** *Дуҫтарҙы ирештереү.*

**ИРЕШТЕРЕҮ** [3] *ҡ.* Төртмә һүҙ менән шаяртыу; мәрәкәләү, үсектереү.— *Эй, егет, егет. Бер еңгәңде лә еңеп, көмөш балдағын ала алмағас, ҡалайтып ҡәйнеш булып йөрөгән булаһың! — тип Зәһит ҡустыһын ирештерҙе.* Һ. Дәүләтшина.

**ИРИДИЙ** [*рус.* ⟨ *гр.*] *и.* Химик элемент, тиҙ иремәй торған ҡаты аҡ буҙ металл.

**ИРИС** [*рус.* ⟨ *гр.*] *и.* Ҡамыш һымаҡ ҡыяҡ япраҡлы, һары, күк төҫтәге еҫһеҙ эре сәскәле күп йыллыҡ баҡса гөлө. *Ирис сәскәһе.*

**ИРИС** [*рус.*] *и.* Һөт, шәкәр ҡушып эшләнгән һор төҫтәге, кубик формаһындағы кәнфит төрө.

**ИРК** *и.* **1.** Кешенең кәйефен, тойғоларын һ. б. тәшкил иткән эске рухи донъяһы; күңел. *Әҙәм иркенә байман таптырмай, буран ҡайнатҡан Ҡаратау мороно яу киткән ерҙәй һилгә ҡалды.* Т. Хәйбуллин. *Сикһеҙ киң күк йөҙөн сыбарлаған йондоҙҙарға ҡарап ирк асам.* Д. Юлтый. **Ирк сығарыу** күңелде ҡандырыу. *Иркәләп ирк сығарыу.*

**2.** *күсм.* Күрк. *[Туҡтамыш хан — Шәгәле Шаҡманға:] Мәжлесемдең ирке һин, кәнәшемдә урта һин.* «Иҙеүкәй менән Мораҙым».

**ИРКЕН** *с.* **1.** Иңе, буйы ҙур; киң. *Иркен булмә. Иркен ер. Иге-сиге күренмәгән иркен дала.* ■ *Өй иркен, беҙҙә лә урын етер.* Н. Мусин. *Күҙҙәремде иркен итеп асып, бүлмәнең стеналарына, тәҙрәләренә ҡарап яттым.* С. Кулибай. / Мул үлсәмле, күләме ҙур (кейем-һалымға ҡарата); *кереһе* тар. *Иркен аяҡ кейеме. Иркен күлдәк. Иркен түшәк. Иркен итеп тегеү.*

**2.** Ҡыҫылмаған, ҡыҫынҡыланмаған, тулы мөмкинлекле; киң. *Иркен тауыш. Иркен һулыш. // Иркен йырлау. Русса иркен һөйләшеү.* ■ *Көрән атта дәрт ҙур, һис ҡалмай иркен бара.* Д. Юлтый.

**3.** *күсм.* Хаҡты, ихтыярҙы ҡыҫмаған; ирекле. // *Иркен уйлау. Иркен һөйләшеү.* ■ *Революция булып үткән донъя йөҙөн таң ҡалдырып иркен көндәр килгән.* Ә. Вахитов.

**4.** *күсм.* Юҡлыҡты, етешһеҙлекте белмәгән; мул. *Күршеләге иркен тормошло кешеләр күп ваҡыт итле аш бешерә.* М. Ғафури. *Йылдар иркен тип үк төкөрмәгеҙ үҙегеҙ ҡалаҡ һуҙған табаҡҡа.* М. Кәрим.

◆ **Иркен тын** (*йәки* **һулыш) алыу** ҡыйын хәлдән еңеллеккә сығып рәхәтләнеү. *Дауыл тынған, тирә-яҡ тыныс булып киткән. Ҡала халҡы иркен тын алып, урамға сыҡҡан* (Әкиәттән).

● *Үҫәрҙең алдын иркен ҡуй.* Мәҡәл.

**ИРКЕНЛЕК** *и.* **1.** Ҡыҫынҡылыҡ, тарлыҡ һиҙелмәгән мул ер, киң урын. *Оҙон ҡыш буйы ҡурала ҡаҡланған мал иркенлеккә сығып, күк үләнгә түйып, таҙарышып, һимерешеп китер ваҡыттар етте.* «Совет Башҡортостаны», 1965, 23 май.

**2.** *күсм.* Эш-ҡылыҡҡа тулы ирек биргән шарт. *Өйҙәгеләр ниндәйҙер иркенлек һиҙгән һымаҡ тындарын үрә алып ҡуйҙы.* Т. Хәйбуллин. *Иркенлек, киңлек теләй күңелкәй, иркем, хөр ҡошом, һин ҡайҙа, һин әй?!* Д. Юлтый. *Иркенлек, тигеҙлек байрағы елберләһен алда.* Һ. Дәүләтшина.

**3.** *күсм.* Етеш, һәйбәт тормош; муллыҡ. *Иркенлеккә сығыу. Иркенлектә йәшәү.*

**ИРКЕНЛӘҮ** *ҡ.* **1.** Ҡыҫырыҡланмай, иркен итеп урынлашыу. *Иркенләп ятыу. Киң түшәктә иркенләп йоҡлау.*

**2.** Ҡамасауһыҙ, мәшәҡәтһеҙ, тулы мөмкинлек, ирек тойоу. *Иркенләп китап уҡыу.*

**3.** Ваҡыт йәһәтенән тулы ирек, теләгәнсә мөмкинлек һиҙеү. *Иркенләп йөрөү. Иркенләп һөйләшеп ултырыу.* ■ *Юғарынан килгән әмерҙең ашығыс булыуы зилскийгә лә, ҡулаҡтарға ла үҙ эштәрен яйлап, баплап, иркенләп эшләргә ирек бирмәне.* Ғ. Дәүләтшин.

**4.** *күсм.* Иректе, ихтыярҙы ҡәртәләп торған тойғонан бушаныу; иркенлек һиҙеү; ирәйеү. *Йәш егеттән шикләнерҙәй урын тапмағас, Мәгүзә тынысланып, иркенләп китте.* Б. Бикбай. *Балаҡайым, һорама, иркенләне сысҡандар. Бер тамсыһын ҡалдырмай, ҡаймағымды эскәндәр.* С. Ҡудаш.

**5.** *күсм.* Тормош, көнкүрештә мулыҡҡа өлгәшеү. *Иркенләп йәшәй башлау.* / Тартынмай, мул итеп тотонор хәлгә килеү; мулығыу. *Аҡсаға иркенләү. Ергә иркенләү. Икмәккә иркенләү. Кейемгә иркенләү.* **Иркенләп тын алыу** 1) төрлө ҡамасау, мәшәҡәттән арыныу, еңеллек тойоу; 2) *күсм.* тормошта муллыҡҡа өлгәшеп, еңеллек тойоу.

● *Ир бала тап, иркенләп ят.* Мәҡәл.

**ИРКЕНСЕЛЕК** *и.* Тормош, көнкүрештәге муллыҡ, етешлек. *Иркенселектә йәшәү.*

**ИРКЕНӘЙЕҮ** *ҡ.* **1.** Майҙан йәһәтенән ҙурайыу; киңәйеү; иркенгә (1 мәғ.) әйләнеү. *Колхоз төҙөлгәс, баҫыуҙар иркенәйҙе.*

**2.** Ҡыҫып тормаҫлыҡ булып киңәйеү. *Күлдәгем иркенәйҙе. Өй иркенәйҙе.*

**3.** Тулы мөмкинлек алып, еңелләшеү. *Һауаға сыҡҡас, тыным иркенәйҙе.*

**4.** *күсм.* Мул, етешкә әйләнеү (көнкүреш, ашау-эсеү тураһында). *Тормош иркенәйҙе.*

**ИРКЕНӘЙТЕҮ** *ҡ.* **1.** Иркенгә (1 мәғ.) әйләндереү, иркен итеү. *Бүлмәне иркенәйтеү.*

**2.** Киңгә әйләндереү, киң итеү. *Күлдәкте иркенәйтеү.*

**3.** Тулы мөмкинлекле, еңелгә әйләндереү. *Тынды иркенәйтеү.*

**4.** *күсм.* Мул, етешкә әйләндереү. *Тормошто иркенәйтеү.*

**ИРКӘ** *с.* **1.** Һөйөлгән, ҡәҙерле, яратҡан. *Иркә ҡыҙ. Иркә ҡатын.* / Һөйөп, наҙлап торғанды яратҡан. *Иркә бала.* ■ *Берҙән-бер ҡыҙ булған Сәрбиямал иркә, үҙ һүҙле булып үҫте.* З. Биишева.

**2.** *и. мәғ. диал.* Кесе туған; һеңле, эне. *Иркәңде ҡара, йығылып төшмәһен.* / Егеттең һөйгән ҡыҙы, һөйгәне. *Сут-сут... Әллә ҡош һайраны, әллә егет үпте иркәһен.* М. Кәрим.

**3.** *күсм.* Яғымлы, йомшаҡ, наҙлы. *Алһыу ҡояштың иркә нурҙары тәҙрә битен нурға буяны.* З. Ҡотип.

◆ **Атам иркәһеме ни** бик ҡәҙерле кешемме

ни, тигән мәғәнәлә әйтелә. *Ниңә шул һынлы ҡурсалайбыҙ был имгәкте, атам иркәһеме ни?* Б. Бикбай. **Фәләндең иркә улы** (*йәки* **ҡыҙы**) мыҫҡыл итеп әйтелә.

● *Юрғаның тире кипмәҫ, иркәнең йәше кипмәҫ.* Мәҡәл.

**ИРКӘК 1.** *с.* Ир енесле, ата (йәнлек, хайуан һәм үҫемлектәргә ҡарата); *киреһе* орғасы. *Иркәк мал. Иркәк ҡолон. Иркәк сәскәле. Иң яҡшы иркәк малды токомға ҡалдырыу. // Сәскәнең иркәге.* ■ .. *Йыртҡыс йәнлек тотто ниһә, йәнлек иркәк булды ниһә .. икәүһе [Йәнбикә менән Йәнбирҙе] башын сәйнәп ашаған.* «Урал батыр». *Бейәнең ҡолонлар ваҡыты еткәс, Ҡусәрбай .. улына: — Улым, бейәнең ҡолонлар сағы етә, ҡарауылла. Әгәр иркәк булһа, үҙеңә инсе итеп бирермен,— ти* (Әкиәттән). *Ҡатын-ҡыҙға андыҙҙың иркәген, ирҙәргә орғаһыһын ҡайнатып эсерәләр. Тән һыҙлағанға килешә* (Хикәйәттән).

**2.** *и. диал.* Йәш айғыр малы. *Ниңә ярһыйһың һин ерән аткай, .. йә тыныслан инде .. иркәгем.* С. Кулибай.

**3.** *и. диал.* Ир кеше. *Был донъя туп тулы кеше, кеме иркәк, кеме теше* (Бәйеттән).

● *Ир ҡыҙғанмаған — иркәк, ҡатын ҡыҙғанмаған — ҡарһаҡ.* Әйтем.

**ИРКӘЛӘНЕҮ** *к.* **1.** *ҡайт. ҡар.* **иркәләү.** *Иркәләнеп ултырыу.*

**2.** Яраттырыу өсөн йылы хис белдереп, кемгәлер һырлыфыу, наҙланыу. *Башҡалар аталарына иркәләнгәндә, ул да минең алға ултырып иркәләнгеһе, һөйҙөргөһө киләлер.* Б. Хәсән. *Ул [Хаят] иркәләнеп, борғаланып, Макаров янына килде.* Һ. Дәүләтшина.

**ИРКӘЛӘТЕҮ** *к.* **1.** Һөйөп наҙлау; иркәләү. *Баланы алға алып иркәләтеү.*

**2.** Саманан тыш һөйөп наҙлау. *[Хафиз карт — Сәгиҙәгә:] Иркәләткәнһегеҙҙер, интеллигент малайына оҡшап баралыр.* М. Тажи.

**ИРКӘЛӘҮ** *к.* **1.** Йылы иғтибар, хәстәр күрһәтеү; наҙлау; иркәләтеү. *Элек бик яратып етмәгән ире [Хәйернисаны] хәҙер бик иркәләй, өф итеп кенә тора башланы.* Б. Бикбай. / *күсм.* Рәхәтлек күрһәтеү. *Тормош уны иркәләмәне.*

**2.** Һөйөп, һыйпап, яратыу тойғоһо белдереү; иркәләтеү. *Әсәләр балаларын «йән киҫәгем, йөрәк итем, күҙ нурым, бәгрем, алтынҡайым, бәпесем-бәпкәм, ҡолонсағым» тип иркәләй.* Ғ. Әмири. / *күсм.* Йылы, наҙлы тәьҫир менән ләззәтләндереү. *Талғын-талғын ғына таң елдәре иртәнсәкәй менән иркәләй.* Т. Йәнәби.

**ИРЛАНД** *и.* Ирландияның төп халҡын тәшкил иткән милләт һәм шул милләттең бер кешеһе (кельт телдәренең береһендә һөйләшә). *Ирланд халҡы. Ирланд ҡатыны. Ирланд теле.*

**ИРЛЕ** *с.* Иргә сыҡҡан, ире бар. *Ирле ҡатын.*

**ИРЛЕ-БИСӘЛЕ** *с. ҡар.* **ирле-ҡатынлы.**

**ИРЛЕК** *и.* **1.** Ир (1 мәғ.) булыу хәле.

**2.** Ирҙәргә (3 мәғ.) хас сифат; батырлыҡ, ҡыйыулыҡ. *Ирлек күрһәтеү.* ■ *Был дошмандар менән көрәшергә көслө ғәйрәт, ҙур ирлек кәрәк.* М. Ғафури. *[Мораҙым:] Дошмандан ҡурҡып, ситтә йәшәү ирлек түгел.* «Иҙеүкәй менән Мораҙым».

● *Ир ирлеген итер, моратына етер.* Мәҡәл. *Һөнәр алды — ирлек, ырыҫ алды — берлек.* Мәҡәл.

**ИРЛЕ-ҠАТЫНЛЫ** *с.* **1.** Ир менән ҡатын булған, өйләнешкән. *Урал менән Ҡарағаш ирле-ҡатынлы булып, донъя көтә башлаған.* «Урал батыр».

**2.** *р. мәғ.* Ир менән ҡатын бергә. *Ирле-ҡатынлы геүләтеп эшләйҙәр.*

**ИРЛӘН** *и.* Игенгә һәм баҡса емештәренә зыян килтергән ала төҫтәге, өндә йәшәй торған кимереүсе йәнлек; алйырҙан. *Ирләндәр йәшәй өңдә, игенде ташый шунда.* З. Биишева.

◆ **Ирлән урт** урты тумпайып торған кешегә ҡарата.

**ИРМӘК** *с.* **1.** Күңелде әүрәтерлек; ҡыҙыҡ, мәрәкә. *Ирмәк эш. Ирмәк уйын. Йәйелеп ятҡан күк боҙ өҫтөндә ирмәк итеп балалар шыуырҙар.* Д. Юлтый. *Көтөү артынан йөрөү тәүҙә ирмәк тойолдо малайҙарға.* Н. Ғәлимов. // *Шундай ирмәк ҡысҡыра улар [ишәктәр].* Я. Вәлиев.

**2.** Ғәжәп тойолған; ҡыҙыҡ. *Ирмәк кеше.* ■ *[Мостафина апайҙың] башында аҡ һарыҡ йөнөнән бәйләнгән бик ирмәк башлыҡ.* Ғ. Шәрипов. // *Сабира ла урамға ирмәк күрергә сыҡҡан.* М. Хәйҙәров. *Нигмәт ағай өйөндә уҡыуҙар ирмәк кенә башланды: аҡбур менән ул батмус һыртына ниндәйҙер таяҡтар, кәкре-бөкрө тәртешкәләр һыҙып сыға...* Б. Бикбай.

**3.** (*баш хәреф менән*) Ир-ат исеме.

**ИРНӘҮ** *и.* Ниҙеңдер уратып, ҡалын булып торған тирәһе, сите. *Ау ирнәүе. Бүреккә бәрәс тиреһенән ирнәү ҡуйыу.*

**ИРНӘҮЛӘҮ** *к.* Нәмәнең ситен тирәсләү; ирнәү ҡуйыу; ситләү. *Ау ирнәүләү. Ҡулъяулыҡ ирнәүлеү.*

**ИРО́НИЯ** [*рус.* ‹ *гр.*] *и.* Мыҫҡыллы аҫтыртын көлкө. *Ирония менән һөйләү.* ■ *Новиковтың асыуы бик тиҙ баҫылды. Ирония менән ҡатынына ҡарап көлә башланы.* Д. Юлтый.

**ИРПӘК** *с. диал.* Шаталаҡ. *Ирпәк булыу.*

**ИРРАЦИОНАЛИ́ЗМ** [*рус.*] *и. филос.* Йәшәйеште иррациональ (1 мәғ.) характерҙа тип һанап, аҡыл менән танып белеү мөмкинлектәрен сикләп, танып-белеү нигеҙендә һиҙенеү, инстинкт, тойғо һ. б. ята тип ҡараған философия фәнендәге идеалистик ағым.

**ИРРАЦИОНАЛЬ** [*рус.* иррациональный] *с.* **1.** *филос.* Законлыҡҡа нигеҙләнмәгән, шуның өсөн кеше аҡылы менән танып белеп һәм логик фекер менән аңлатып булмаған.

**2.** *мат.* Берәмек менән бирел булмай торған, берәмек менән үлсәнмәй торған. *Иррациональ һандар.* / Арифметикаһың дүрт төп ғәмәленән башҡа тамыр алыуҙы ла күҙ алдында тотҡан. *Иррациональ тигезләмә.*

**ИРРИГА́ЦИЯ** [*рус.* ‹ *лат.*] *и.* Уңдырышын арттырыу өсөн ҡоро ерҙәрҙәге сәсеүлектәрҙә яһалма һуғарылыш. *Ирригация каналдары. Ирригация эштәре.*

**ИРСАЛ** [*ғәр.*] *и. иҫк. кит.* Ниҙендер тәғәйенләп ебәрелеүе.

□ **Ирсал итеү** (*йәки* **ҡылыу**, **әйләү**) тәғәйенләп ебәреү. *Беҙ ки фәлән ибне фәләндән бер күрергә зар-интизар булып, күптән-күп, суктан-*

*сук сәләмде ирсал вә тәблиғ әйләнем.* Х. Ибраһимов.

**ИРСӘ** *киҫ. иҫк. кит.* Иһә.

**ИРСӘЙЕҮ** *к. диал.* Тәкәбберләнеү.

● *Ирсәйгәнгә ирсәй, башың күккә тейгәнсә; иңкәйгәнгә иңкәй, башың ергә тейгәнсә.* Мәҡәл.

**ИРСӘК** *с. диал.* Тәкәббер. *Ирсәк булыу.*

**ИРТЕ** *и.* Кәртә, иңлек һайғауын һалыу өсөн ҡуш ҡаҙыҡ араһына салып бәйләнгән бау; ҡулса. *Ирте талдан үреләэ.* ■ *Иртегә һайғауҙың башы һалына.* Т. Морат. / Һуҡа уҡлауының башындағы бөгәзе; ҡулса. *Һуҡа иртеһе. Ирте ҡуйыу.*

**ИРТЕЛӘҮ** *к.* Ирте яһап бәйләү. *Иртеләп кәртәләү. Кәртәне сыбыҡ менән иртеләү.*

**ИРТИЖАЛ** [*ғәр.*] *и. иҫк. кит.* Ҡапыл уянған илһам. / Экспромт.

**ИРТИЖАЛӘН** [*ғәр.*] *р. иҫк. кит.* Алдан әҙерлек булмаған көйө; әҙерлекһеҙ. *Иртижалән шиғыр һөйләү.*

**ИРТҮК** *р.* Иртәнге ваҡытта, бик иртә. *Иртән иртүк.* ■ *Йоҡоһонан .. иртүк тороп өлгөрә. Таң аттымы, урам буйлап хат ташыусы йүгерә.* Ш. Биҡҡолов. / Көн кисләмәҫ борон уҡ, көндөҙ үк. *Колхозсыларҙың кәңәшмәһе иртүк бөттө.* Б. Бикбай.

**ИРТӘ** [1] *и.* Тәүлектең бер өлөшө, көндөң тәүге мәле, башланған ваҡыты, көндөң башы; иртәнсәк. *Йәйге иртә. Тын иртә. Ниндәй матур иртә. Иртә менән. Иртәнән бирле. Иртәнән ҡара кискә тиклем.* ■ *Һауала төрлө сырлаҡ ҡоштар матур, йылы .. йәй иртәһен үҙҙәренең әҙәм белмәҫ телдәре менән маҡтап, сыр-сыу киләләр ...* Ғ. Дәүләтшин. *Ниндәй йәнле иртә! Бына бер саҡ — тау биттәрен солғап яҡтыға ҡояш сыға башлай ..* Ғ. Сәләм. *Ал таң атып, тыумаҫ борон йәйге иртә, тор йоҡоңдан, эшең бөтһөн тиһәң иртә.* Н. Иҙелбай. *Иртә лә кил, кис тә кил, тәҙерәмде сиртә кил* (Халыҡ йырынан).

♦ **Хәйерле иртә!** иртәнге ваҡытта, иртән йоҡонан торғанда яңы тыуған көн менән ҡотлау һүҙе. *Йә Мәскәүҙән, йә Өфөнән музыка гөрләп тора.— Хәйерле иртә, балалар! — тигәс, уяна ҡыҙым. Мәскәү һөйләй,—тигәс диктор, тәрән уйлана ҡыҙым.* Р. Ниғмәти.

● *Иртә уңмаған кис уңмаҫ, кис уңмаған һис уңмаҫ.* Мәҡәл. *Кеше ҡайғыһы иртә инә, кис сыға.* Мәҡәл.

**ИРТӘ** [2] *с.* **1.** Ғәҙәти бер мәлдән, ғәҙәттәгенән алда, билдәле бер ваҡыттан элек булған. *Иртә көҙҙән. Иртә таңда. Иртә таңдан тороу. Иртә яҙ. Иртә уяныу.* ■ *Зариф ҡарт иртә таң менән тора, эшләй көнө буйы саф һауала.* Б. Бикбай. *Кис менән иртә йоҡоға ята торған крәҫтиән халҡы торғанда ла иртә тора.* Ғ. Дәүләтшин. *Иртә таңда һипкән нуры менән ҡояш сайҡай тағы ер, күгән.* Ғ. Амантай.

**2.** Ғәҙәттәге йәки нимәгәлер кәрәкле ваҡытҡа тиклем булған, ваҡытынан алда булған. *Баланың иртә үҫеше. Иртә никах. Иртә үлем.* // *Иртә ҡартайыу. Иртә өйләнеү. Иртә үлеү. Иртә бәрәсләгән һарыҡ.* ■ *[Ғәйни:] Бисәкәй, гөшөр ҡасмаҫ әле, хәҙерҙән үк был турала һөйләү иртәрәк .. ашығырға ярамай.* Т. Йәнәби. *— Ҡуй, балам, һыу керергә иртә әле.* М. Ғафури.

**3.** Башҡаларҙан алда өлгөрә, бешә, етешә торған (йәшелсә-емеш һ. б. ҡарата). *Иртә емештәр. Иртә йәшелсәләр. Иртә ҡыяр. Иртә картуф сәсеү.* **Иртә культуралар** (*йәки* **ашлыҡтар**) яҙ башынан һөрөлгән ергә сәселә торған ашлыҡтар (бойҙай, һоло, арпа һ. б.).

**4.** *р. мәғ. диал.* Иртән. *Бесән еткән, иртәнән ҡалмай саба башларға кәрәк.*

♦ **Иртәнән һуң** киләһе көндөң иртәгеһе; бер көндән һуң. *Ата .. таягын карга сәнсте: — Ҡоҙалар иртәнән һуңға кискә киләләр, никах уҡытабыҙ инде [тине].* Һ. Дәүләтшина. *[Батша:] Икенсе шартты үтәүҙе иртәгә, ә өсөнсөһөн — иртәнән һуңға тәғәйенләйем,— ти* (Әкиәттән).

● *Иртә барһаң, ит бешә; һуңға ҡалһаң, бит бешә.* Әйтем. *Иртә килгән урын өсөн, һуң килгән тамаҡ өсөн.* Әйтем. *Иртә ҡысҡырған кәкүктең башы ауырта.* Мәҡәл. *Иртә торған бай булған, һуңлап торған хур булған.* Әйтем. *Иртә торғандың ырыҫы артыр.* Әйтем. *Иртә ятып, иртә торған донъяла йөҙ йыл торған.* Әйтем.

**ИРТӘГЕ** *с.* Иртәгә була торған, иртәнге. *Иртәге эш.* ■ *Иртәге көндөң маҡсаты ла асыҡ булғас, мин Мәрйәмгә биргән вәғәҙәне.. үтәргә булдым.* Д. Юлтый.

● *Ил эшенең иртәгеһе маҡтаулы.* Мәҡәл.

**ИРТӘГЕҺЕН(Ә)** *р.* Берәй хәл-ваҡиғаның икенсе көнөнә. *Эшләгән ерҙә балтаны онотоп ҡалдырғанмын. Иртәгеһенә барһам, балта юҡ.* М. Тажи.

**ИРТӘГӘ** *р.* Бөгөндән һуң килгән көндә, бөгөндөң иртәгеһенә. *Иртәгә иртүк. Иртәгә үк.* ■ *[Новиков:] Иптәштәр, барыбер иртәгә фронтҡа китәбеҙ, давай бөгөн дер һелкетеп күңел асайыҡ.* Д. Юлтый.

**ИРТӘҒОШ** *и.* Түбәһе, арҡаһы көрән, тамаҡ аҫты, сикәһе ҡара, түше, ҡорһағы һары һайрар турғай. *Июль иртәһе. Иртәғош, һандуғас һайрауы ишетелмәй.* Я. Хамматов.

**ИРТӘК** *и.* Халыҡ ижадындағы эпик әҫәр. *Иртәктәр, башлыса, батырҙар тураһында эпосҡа тартым.* К. Әхмәтйәнов.

**ИРТӘ-КИС** *и. йыйн.* Иртәнсәк һәм кис; төрлө ваҡыт.

● *Изгелектең иртәгеһе-кисе юҡ.* Мәҡәл.

**ИРТӘ-КИСЕН** *р.* Иртәнсәк тә, кис тә; һәр ваҡыт.

**ИРТӘЛЕ-КИСЛЕ** *р.* Иртәнсәк һәм кис. *Ул [Һыуһылыу] көн дә иртәле-кисле [Заятүләккә] ит, ҡорот, һалма килтереп ашата, ҡымыҙ эсерә.* «Заятүләк менән Һыуһылыу».

**ИРТӘЛӘЙ** *р.* Ваҡытынан элек, иртә менән. *Талғын-талғын ғына таң елдәре иртәнсәкәй менән иркәләй. Үпкән һымаҡ була бит осомдан эшкә сыҡҡан өсөн иртәләй.* Т. Йәнәби.

**ИРТӘЛӘҮ** *к.* Бик иртә, ваҡытынан элек ҡуҙғалыу, эшкә тотоноу. *Сынтимер .. шофёр егеттәргә өндәште: «Һеҙ әллә бында йоҡланығыҙмы? Бик иртәләгәнһегеҙ».* Ш. Янбаев.

**ИРТӘМЕ-ҺУҢМЫ** *р.* Киләсәктә, берәр ваҡыт, ҡасан да булһа. *Иртәме-һуңмы барыһы беленер.* ■ *Дәүләт һағына алынған ҡағыҙҙар, билдәле, иртәме-һуңмы донъя күрер.* «Совет Башҡортостаны», 1978, 2 август.

**ИРТӘН** *р.* **1.** Алдағы беренсе көндә; иртәгә. *[Барсын әбей:] Юҡ, Сәғиҙә, бөгөн шишәмбе,*

*һөлөк һалыуҙың бер файҙаһы ла булмай ул. Иртән, шаршамбы көн һалырбыҙ.* Һ. Дәүләтшина.

**2.** *диал.* Иртәнсәк.

**ИРТӘНГЕ** *с.* **1.** Иртәгә була торған; иртәге. *Иртәнге дәрестәргә әҙерләнеү. Иртәнге йыйылышҡа әҙерләнеү. Иртәнге көндө уйлау. // Иртәнгене уйлау.* ■ *Бирелгән норманы атып бөтөргәнсе бармаҡтар ката, сейләнә, хатта иртәгеһенә шешеп китә.* Д. Юлтый.

**2.** Иртә менән булған; иртәнсәкке. *Иртәнге аш. Иртәнге дәрес. Иртәнге ел. Иртәнге ҡояш. Иртәнге сәғәт ете. Иртәнге сәй. Иртәнге томан. Иртәнге һалҡын.* ■ *Иртәнге сыуаҡтың йылы ҡосағында Ғәйни ағай менән Хәсби апай .. киң баҫыуға ҡарай йүнәлделәр.* Т. Йәнәби. // *Иртәнгене ашағас, Тимер менән иптәштәре уҡырға барҙылар.* Б. Бикбай.

♦ **Иртәнге намаҙ** *дини* таң яҡтыра башлап, ҡояш сыҡҡансы уҡыла торған намаҙ; биш намаҙҙың беренсеһе. *Иртәнге намаҙ ваҡыты. Иртәнге намаҙ — ике рәкәғәт сөннәт, ике рәкәғәт фарыз уҡыла* (Хикәйәттән).

● *Иртәнге кәрәгеңде бөгөн әҙерлә.* Әйтем. *Иртәнге ашты ташлама, кискеһен башлама.* Әйтем.

**ИРТӘНГЕЛЕК** *с.* **1.** Иртәнге көнгә тәғәйенләнгән. *Иртәнгелек утын.*

**2.** *и. мәғ.* Иртәнсәкке тамаҡ, аш. *Иртәнгелеккә ашау.*

**ИРТӘНСАҠ** *и. диал.* Иртәнсәк.

**ИРТӘНСӘК** *и.* **1.** Көндөң башланған ваҡыты. *Иртәнсәктән бирле. Иртәнсәккә тиклем.*

**2.** *р. мәғ.* Көн башланғандан һуңғы бер аҙ ваҡыт эсендә. *Иртәнсәк сәғәт ундарҙа эселә башлаған сәй көндөҙгө икеләргә тиклем тартылды.* Ғ. Дәүләтшин. *Иртәнсәкәй тороп бер ҡараһам, яңғыҙ сағыл күренә ҡош кеүек* (Халыҡ йырынан).

**ИРТӘСЕЛ** *с.* Иртә ҡуҙғалыусан, иртә тороусан. *Иртәсел кеше.* ■ *Венгрҙар гөмүмән иртәсел халыҡ, иртә тороу уларҙың ғәҙәтенә ингән, сөнки сәғәт етелә заводтарҙа, учреждениеларҙа эш башлана, көндөҙгө икелә-өстә эш [бөтә].* Ж. Кейекбаев.

**ИР-УҘАМАН** *и. йыйн.* Илдә яҡшы эштәре менән танылған ирҙәр. *Ил намыҫын һаклаған ир-уҙаман булалыр.* «Ҡуңыр буға».

**ИРҺЕҘ** *с.* Ире булмаған, ире юҡ. *Ирһеҙ ҡатын.* ■ *[Мин:] — .. Ниңә үпкәләнең, әйт инде,— тигәс: — Мин ярлы ҡыҙы шул, һин мине һаңға һуҡманың, .. мин дә ирһеҙ ҡалмам әле, әйҙә, бай ҡыҙҙарын ал,.. тине Зөләйха.* Т. Йәнәби.

**ИРҺЕНЕҮ** *к. ғәҙәттә юкл. ф.* Иреңде үҙеңә тиң күреп, ризалыҡта булыу; иргә һанау. *[Көнһылыу — ағаһына:] Биргән генә кейәүең теремек түгел, күңелкәйем бер ҙә ирһенмәй* (Халыҡ йырынан).

**ИРҺЕРӘҮ** *к.* Иргә зарығыу, ир теләү.

**ИРҺӘК** *с.* Ир яратыусан. *Ирһәк ҡатын. Ирһәк булыу.* / Ир-ат тирәһендә уралырға яратҡан; ҡыйшанлаҡ.

● *Бурға бур ышанмаҫ, ирһәккә ирһәк ышанмаҫ.* Мәҡәл.

**ИРҺӘКЛӘНЕҮ** *к.* Ирһәккә әйләнеү, ирһәк булыу. *Ирһәкләнеп йөрөү.*

**ИРҺӘҮ** *к. кар.* **ирһерәү.**

**ИРШАД** [*фарс.*] *и. иҫк. кит.* Кемдеңдер берәүҙе уҡытыуы, өйрәтеүе.

□ **Иршад итеү** (*йәки* **әйләү**) уҡытыу, өйрәтеү. *Был фәҡир бәндә фәнүн гилемдән үҙенең хазинаһында барынса уларға бирмәк илә сәмахәт күрһәтеп, уларҙы иршад вә делшад әйләне.* «Батыршаның хаты».

**ИР-ШАҺБАЗ** [*төрки*+*фарс.*] *и.* Батыр ир; ир-ыласын. *Рабиғаның матур тауышы моңло, наҙлы, наҙы менән аулап ала ир-шаһбазды.* Ш. Бабич.

**ИРӘБЕ**[1] *с.* Кешегә ҡарата асыҡ, хуш күңелле, мөләйем йөҙлө; илгәҙәк. *Ирәбе кеше. // Ҡатынҡыҙҙар ҙа бөгөн ирәбе йөрөйҙәр, ҡасмайҙар, партизандарға аш бешереп, сәй ҡайнат[алар].* Һ. Дәүләтшина.

**ИРӘБЕ**[2] *с.* Кәүҙәгә ныҡлы, баҙыҡ, теремек. *Ирәбе бала. Ирәбе булыу.* ■ *Ирәбе булғаны өсөн балаға Алпамыша тип исем биргәндәр, ти.* «Алпамыша».

● *Ирәбе ҡатын иллелә лә бала табыр.* Мәҡәл.

**ИРӘБЕЛӘНДЕРЕҮ**[1] *к. йөкм. кар.* **ирәбеләнеү**[1]. *Эткол байҙың көлөмһөрәп ҡаршы алыуы .. зилскийҙе ирәбеләндереп ебәрҙе.* Ғ. Дәүләтшин.

**ИРӘБЕЛӘНДЕРЕҮ**[2] *к. йөкм. кар.* **ирәбеләнеү**[2].

**ИРӘБЕЛӘНЕҮ**[1] *к.* Асыҡ, мөләйем йөҙлөгә әйләнеү; илгәҙәкләнеү. *Бисәләр тәүҙә бер-береһенән тартынған һымаҡ ултырһа ла, берәр шәшке сәй эскәндән һуң, ирәбеләнеп киттеләр.* Ғ. Дәүләтшин.

**ИРӘБЕЛӘНЕҮ**[2] *к.* Кәүҙәгә, буйға ҙурайыу; баҙыҡланыу, теремекләнеү. *Ирәбеләнеп үҫеп китеү.*

**ИРӘБӘЙЕҮ**[1] *к. диал. кар.* **ирәбеләнеү**[1].

**ИРӘБӘЙЕҮ**[2] *к. диал. кар.* **ирәбеләнеү**[2].

**ИРӘҒЕШЕҮ** *к. диал.* Ирәгәләшеү.

**ИРӘГӘЛӘШЕҮ** *к.* Һүҙгә килеп, ҡаршы әйтешеү; эрепләшеү. *Телеңә һалышып, ирәгәләшеп торма инде, эшеңә кит.*

**ИРӘЙЕШЕҮ** *к. урт. кар.* **ирәйеү.**

**ИРӘЙЕҮ** *к.* **1.** Иркенлек, рәхәтлек тойоу; кинәнеү. *Сөнәғәттең йөрәге дәрт менән тулған, ул ғорурланып, ирәйеп атлай.* Ж. Кейекбаев.

**2.** Шәп кеше булып иркенләү; маһайыу. *Ҡай берәүҙәр шулай, буш башаҡтай, буш баш менән йөрөй ирәйеп.* Ҡ. Даян. *Әллә кем булып ирәйеп йөрөгән дейеүҙе Урал елтерәтеп күтәреп тә алды, бырактырып та ебәрҙе, ти.* «Урал батыр».

**3.** *диал. кар.* **ирәбеләнеү**[2].

**ИРӘЙТЕҮ** *к.* Ирәйергә сәбәп биреү, ирәйергә юл ҡуйыу.

**ИРӘК** *и.* Ейеткән тирене ҡыра торған ҡорал; тире тарттыс. *Ирәк менән тире ҡырыу.*

**ИРӘКЛӘҮ** *к.* **1.** Ирәк менән ҡырыу. *Тире ирәкләү.*

**2.** *диал.* Киртләсләү.

**ИРӘКТЕ** *и.* Бер башҡорт ырыуының исеме.

**ИРӘМ** *с. диал.* Күңелле, мәрәкәсел. *Ул ирәм кеше, бер ҙә бошонмай.* М. Тажи.

**ИРӘМЕК** *с.* Кәүҙәгә ныҡлы, баҙыҡ; ирәбе. *Ирәмек бала. Ирәмек булыу.*

**ИРӘМҺЕТЕҮ** *к. һөйл.* Шашындырыу, осондороу. *Баланы ирәмһетеү.*

**ИРӘМҺЕҮ** *к. һөйл.* **1.** Алсаҡланыу, ирәбеләнеү. *[Ынйыкай] ирәмһеп, Юлдыкайҙың ҡулын тота.* Х. Ғәбитов.

**2.** Иркенлек һиҙеп шашыу; осоноу.— *Ҡайҙа был байрам? — тип иҫе киткән, ирәмһегән балаҫағалай.* Х. Ғәбитов.

**ИРӘМӘН** *и. диал. ҡар.* **ирәүән**².

**ИРӘН** ¹ *и.* Батыр, көслө ир. *Был донъя типтулы кеше, кеме иркәк, кеме теше. Ҡайҙа уның кеүек кеше йыһан тулы ирәндәрҙән.* М. Өмөтбаев.

♦ **Ғәйеп ирән** дини хөрәфәт буйынса, күҙгә күренмәй кешеләрҙе бәләнән ҡотҡарып, һаҡлап йөрөгән изге кеше (Хызыр илъяс һ. б.) *[Хан — уҙ ярандарына:] Аллаға шөкөр, биргән саҙаҡа, салған ҡорбандар арҡаһында, ғәйеп ирәндәр ярҙамы менән балам ҡотолған.* М. Буранғолов.

**ИРӘН** ² *ярҙ. к. иҫк. кит.* Икән.

**ИРӘҮЕЛ** *и. диал.* Рәхәтлек, ләззәт. *Тындары ҡыҫылған Кинйә лә көлдәк элгерсәгеп ысҡындырып, бына ҡайҙа икән уның ирәүеле, тип уйланы.* Ғ. Ибраһимов.

**ИРӘҮЛӘТЕҮ** *к.* Яман ҡысҡыртыу; шарылдатыу. *Йомарт күңел менән бер нәмәһен уртаҡлашһа кескәй балалар: «Ниңә уны кешегә бирҙең?» — тип, хәҙер ирәүләтеп яралар.* С. Ҡудаш.

**ИРӘҮЛӘҮ** *к.* Яр һалып ҡысҡырыу; шарылдау. *Мин .. һикереп торҙом да, ирәүләп илап, баш һуҡҡан яҡҡа сығып йүгерҙем.* Ғ Ғүмәр.

**ИРӘҮӘН** ¹ *с.* **1.** Иркен, киң тәбиғәтле. *Ирәүән кеше. // Ирәүән йөрөү.* ■ *Ҡыйынлыҡ килгәндә ҡыйыу, тыныс тормошта ирәүән була Ҡарабай.* «Ҡуҙыйкүрпәс менән Маянһылыу».

**2.** *күсм.* Мул, иркен. *Ирәүән тормош. // Ирәүән йәшәү.*

**ИРӘҮӘН** ² *и.* Төптән өйкөм булып сыҡҡан эре, киң япраҡлы, оҙон һабаҡлы, һепертке сәскәле ҡара бойҙайҙар ғаиләһенә ҡараған күп йыллыҡ үлән (тамырынан дарыу яһайҙар). *Ирәүән тамырын әсетеп эсеү.* ■ *Атайым менән, ирәүән тамыры эҙләп, был яҡтарҙы аҙ ҡыҙырманыҡ,— тине Нурулла.* Ш. Янбаев.

● *Ирәүән барҙа ир үлмәҫ, андыҙ барҙа ат үлмәҫ.* Мәҡәл.

**ИРӘҮӘНЛӘНЕҮ** *к. ҡар.* **ирәүәнләү**.

**ИРӘҮӘНЛӘҮ** *к.* Ирәүәнлек, рәхәтлек, ирек һиҙеү; иркенләү, ирәйеү. *Ирәүәнләп сәй эсеү. Ирәүәнләп ятыу.* ■ *Юлсы кеше .. хужа һымаҡ бик иркенләп, ирәүәнләп йөрөй.* Р. Солтангәрәев. *Башҡалар көлөмһөрәп ҡуйҙылар. Баһау бай йәнә ирәүәнләп китте һәм Усман байға: —.. Тома наҙан! Ахмаҡ! — тине һәм үҙенең был һүҙенән бик кәнәғәт булды.* Ж. Кейекбаев.

**ИСАҒУЖИ** [*ғәр.*] *и. иҫк. кит.* Элекке мәҙрәсәлә уҡытылған логика дәреслеге. *[Мазлумов:] Мәҙрәсәнең мөдриәте .. уҡыу-уҡытыу программаларын яҡшыртыу юлында зәррә кәҙәре лә эшләмәгән. Шул уҡ фәндәр,.. шул уҡ сафсата тороп ҡалған. Исағужи, ғаҡаиде ислам һәм башҡа шундайҙар.* Ғ. Ғүмәр.

♦ **Исағужи хан** иҫке мәҙрәсәнең икенсе синыф уҡыусыһы.

**ИСЕЛ** *с. иҫк.* Ҡыҙғаныс, йәл. *Һалдаттар исел ирҙе алып барҙы.* «Буҙйегет».

**ИСЕМ** [*ғәр.*] *и.* **1.** Кешегә тыуғас та бирелә торған шәхси атама; ат. *Матур исем. Ят исем. Исемең кем? Исемде әйтеп күрешеү. Балаға исем һайлау.* ■ *Ҡыҙ әйткән: «Исемең кем, егет?» — тигән. Егет аптырап ҡалған. Кешелә исем тигән нәмәнең булғанын ул белмәй икән. «Нимә һуң ул исем?» тип һораған. Ҡыҙ: «Бына һиңә кем тип өндәшәләр һуң?» — тигән* (Әкиәттән). / Кешенең фамилияһы, атаһының исеменән торған шәхси аты. *[Ғәләү:] Ул исемен йәшермәгән, асыҡ ҡуйған, [мәҡәләне] баҫып сығарһаҡ та хәбәрсенең кем икәнлеге беленер ине.* Б. Бикбай. / Мыҫҡыллап, көләп ҡушылған ҡушамат. *[Тәнзилә әбей:] Ҡара ҡыҙым, „сабаталы уҡытыусы" тип исем атап ҡуймаһындар.* М. Тажи. *[Егеттәр] береһен-береһе уҙҙырып исем атау эшенә керештеләр.— Сәлих иптәш! — .. Гофмаршал Сәлих де Мәхмудов!* С. Агиш. *Шул арала йәштәр Новиковка „Христа спаситель" исем дә ҡушып ебәргәндәр.* Д. Юлтый. **Ләҡәп исем** кешенең шаяртып йәки мыҫҡыллап, көләп ҡушҡан атамаһы (ғәҙәттә кешенең ҡылығы, буй-һыны һ. б. үҙенсәлеген күрһәтеп ҡушыла); ҡушамат. **Ярған исем** үҙ шәхесендә йәшереү өсөн алына торған икенсе бер исем. *Исемемде минең һораһағыҙ, ялған исемдәрем Буранбай* (Халыҡ йырынан). **Исем туйы** балаға исем ҡушҡанда үткәрелә торған ҡунаҡ мәжлесе. *Ат еткән ергә ат, хат еткән ергә хат ебәреп, бик күп ҡунаҡ йыйҙылар ҙа, ҙур исем туйы яһанылар, ти. Бөтә халыҡ алдында Күсмәҫ хан улына Ҡуҙыйкүрпәс тип, Күсәр хан ҡыҙына Маянһылыу тип исем бирҙе, ти.* «Ҡуҙыйкүрпәс менән Маянһылыу». **Исем ҡушыу** 1) бала тыуғас та уға билдәле бер шәхси атама беркетеп ҡуйыу. *Ул балаларының береһенә Алтан тип, береһенә Барсын тип исем ҡуштылар, ти* (Әкиәттән); 2) кешегә ҡушамат биреү, ҡушамат тағыу. **Исем яңыртыу** элекке исемендә йөрөмәй, икенсе исем алыу. *Үҙегеҙҙең исемегеҙ кем һуң, мөғәллимә? .. Хәҙер ни ҡалала уҡыған йәштәр исем яңырталар бит. Һеҙ үҙегеҙ ҙә берәй ят исем ҡушып алғанһығыҙҙыр инде.* М. Тажи.

**2.** Төрлө предмет, күренеш, нәмә һ. б. атамаһы. *Ауылдың исеме. Газетаның исеме. Йырҙың исеме. Китаптың исеме. Колхоздың исеме. Тауҙың исеме. Шиғырҙың исеме. «Ҡыҙыл партизан» исемендәге колхоз.* ■ *Ни тиклем генә матур эшләнгән булмаһын, исеме барыбер көршәк инде уның.* З. Биишева. *Түңгәүер — был ырыуҙың исеме булған, мал аҫрау түңгәүерҙәрҙең кәсебе булған.* «Бабсаҡ менән Күсәк». *[Сынбулатов:] «Кантон» тигән исем хәҙер үҙе юҡ, хәҙер район булып йөрөйбөҙ.* М. Тажи.

**3.** Кешегә берәй өлкәләге тырышлығы, оҫталығы, белеме һ. б. ҡарап бирелгән атама; дәрәжә. *Маҡтаулы исем. Хөрмәтле исем. Исем алыу. Советтар Союзы Геройы исеме биреү.* ■ *Шағирҙар Сәләх Күлибайға, Ғайнан Әмиригә .. Башҡорт АССР-ының атҡаҙанған культура работнигы тигән маҡтаулы исемдәр бирелде.* «Ағиҙел», 1969, № 6. / Кешенең эш-һөнәрен, ижтимағи хәлен белдергән һүҙ; атама. *Ҡурайсы*

*исеме. Оҫта исеме. Йырсы исеме.* ■ *Был хатында Юлия экзамендарҙы яҡшы биреп, врач исеме алғанын .. яҙған ине.* Һ. Дәүләтшина. / Эш, хеҙмәт өлкәһендәге ҡаҙанышҡа ҡарап бирелә торған рәсми атама. *Йәш ансамблдең маҡсаты ҙур. Ул «халыҡ ансамбле» исемен алыу өсөн көрәшә.* «Совет Башҡортостаны», 1964, 23 ғинуар.

**4.** Танылғанлыҡ, дан, шөһрәт. *Исеме билдәле. Исеме киң таралған. Исеме бар. Исем алыу.* ■ *Ҡалһын исемең мәңгегә, ысын һүҙ менән ал атаҡ.* Ш. Бабич. *Йәрмәт ағайҙың бәхете баланан киткән ине. Уның бисәһе Гөлбикә еңгә бала табыу менән исем алған кеше.* Д. Юлтый. / Намыҫ, яҡшы ат. *Исем быҫратыу. Исемен һатыу. Исеменә тап төшөрөү.*

**5.** *төб. клш.* **исеменә** Берәр кешегә һ. б. йүнәлтелгән, билдәләнгән, адресланған. *Бала исеменә яҙҙырыу. Ғаризаны директор исеменә яҙыу. Мөлкәтте балалар исеменә күсереү. Исеменә арнап.* ■ *[Ҡотлоғужа ҡарт] Миңлеғәли исеменә ағас ултыртырға булды.* Р. Солтангәрәев.

**6.** *у.-в. клш.* **исемдә** Нимәнеңдер кем ҡарамағында булғанын белдерә. *Мөлкәт һинең исемдә.* ■ *Көн буйына һуҙылды ревизия. — Документтар дөрөҫ төҙөлмәгән .. бөтәһе минең исемдә. Ярай, ҡалған ағын иртәгә асыҡларбыҙ,— тине Солтанов.* Б. Бикбай.

**7.** *сыгн. клш.* **исеменән** Берәй кеше, ойошма һ. б. үтенесе, һорауы, талабы буйынса. *Ауылдаштар исеменән. Халыҡ исеменән.* ■ *Батальонда беҙҙән башҡа бөтәһе егермеләп мосолман һалдаттары бар. Мин шулар исеменән эшселәр йыйылышына барам.* Д. Юлтый. *Фәйзуллин .. дауам итте: — Протоколда, конечно, һеҙҙең һүҙҙәр ҙә теркәлгән. .. Һеҙ был һүҙҙәрҙе киң масса исеменән һөйләйһегеҙ.* С. Агиш.

**8.** Сифат яһаусы *-ғ*дағы / *-ғ*дәге формаһында килеп, кемдер хөрмәтенә бирелгән атаманы белдерә. *В. И. Ленин исемендәге библиотека. Н. К. Крупская исемендәге баҡса.*

**9.** *грам.* Предметты белдереп, килеш, һан менән төрләнә торған һүҙ төркөмө. *Исем ҡылым. Ҡушма исем. Уртаҡлыҡ исемдәр. Яңғыҙлыҡ исемдәр.* ■ *Исем кем? нимә? кемдәр? нимәләр? һорауҙарына яуап була.* Ж. Кейекбаев.

♦ **Исеме генә ҡалыу** үҙенең быҡаса булған төп йөкмәткеһен, сифаттарын юғалтҡан нәмә, күренеш һ. б. тураһында әйтелә. *Йорт тулы әрем, алабута, ҡырмауыҡ үҫеп ултыра. Ихата ситәненең исеме генә тороп ҡалған.* Д. Исламов. **Исемем [фәлән] булмаһын** берәй нәмәне эшләргә ант итеп әйтелгән һүҙ. *Эткол бай: — Бына ант итеп әйтәм, әгәр ҙә Сураголдоң башын килтермәһәм, исемем Эткол булмаһын,— тип бүркен ергә орҙо.* Т. Хәйбуллин. **Исеме лә ҡалмау** бөтөнләй бөтөү, юҡ булыу, эҙһеҙ юғалыу. *Шул золомдар тамам бөтөп, [реакцияның] исеме ҡалмаҫ ер йөҙөндә.* М. Ғафури. **Исеме ни тора** берәй дан, дәрәжәгә ҡыҙыҡҡанда йәки ғәрләнгәндә әйтелә. *[Үмәр:] Бындай яҡшы урынды көндөҙ сыра яндырып эҙләһәң дә табып буласаҡ түгел. Старшина улы тигән исеме ни тора.* Һ. Дәүләтшина. **Исеме оло** ниҙҙендер әһәмиәтен ҙурайтып күрһәткәндә әйтелә. **Исеме(ң) юғала** (*йәки* **юғалыр**) кешенең кире ғәҙәтен билдәләп шелтәләгәндә әйтелә. — *Бер эште ҡырҡ эшләмәһәң, исемең юғала бит һинең.* **Исем итеп** ысын итеп түгел, иҫәп өсөн генә. *Исем итеп йөрөтөү. Исем итеп алыу.* ■ *Ҡулынан эш килмәгән кешене исем итеп йөрөтәләр.* **Исем күтәреү** хаҡһыҙға, тейешһеҙгә ниндәйҙер исем алыу. *[Тимер:] — Ниңә килдең..? Кешеләр әллә нимә уйлауҙары бар. [Фатима:] — Күптән уйлайҙар инде. Юҡҡа исем күтәргәнсе, исмаһам, бар өсөн булһын.* Б. Бикбай. **Исем ҡалыу** (*йәки* **ҡалдырыу**) берәй эш-ҡылығың менән халыҡ телендә ҡалыу (күберәк насар эш-ҡылыҡҡа ҡарата әйтелә). *Бер дәрүиш ҡоҙоҡ быҫратып та исем ҡалдырған бит.* Б. Бикбай. **Исем өсөн** *ҡар.* **исем итеп.** *[Фельдшер] ҡалған никруттарҙы ла исем өсөн өҫтән-мөҫтән генә ҡараны ла, бөтәһен дә ..хеҙмәткә яраҡлы тип тапты.* Я. Хамматов. *Стакан күтәрәләр. Исем өсөн Фёдор ҙа эскән була.* С. Мифтахов. **Исем сығарыу** (*йәки* **сығыу**) насар эш, ҡылыҡ тураһында хәбәр таратыу; яманатын һатыу. *«Алмаҫ булһаң, коро исемемде сығарып йөрөр булһаң, мине күреү түгел, хат та яҙма»,— тип [Зәйнәп] нисә рәт әйтте.* М. Ғафури. *Әсә .. Ғүмәрҙе клуб һәм башҡа урындарға иркен ебәрә. Санияны ғына бер аҙ һаклай. Ҡыҙ кеше бит, әллә ни исеме сығып ҡуйыр тип ҡурҡа.* С. Агиш. **Исем ташы** ҡәбергә ҡуйылған яҙыулы таш; ҡәбер ташы. *Әгәр бөгөн киҫкә мин үлһәм, .. тупрағыма ҡуйыр исем ташын дошманыма яҡын ҡаҡмағыҙ!* С. Кулибай. **Исем һатыу** яманат, насар дан таратыу. *Сәрби ғәҙәттәгесә Батталовтың муйынына аҫылынманы. «Көпә-көндөҙ килеп, минең исемемде һатырға, әҙәм көлкөһөнә ҡалдырырға итәһеңме?» — тип ҡаршыланы.* Я. Вәлиев. **[Ҡоро] исем булып йөрөү** файҙа килтермәй, иҫәптә генә тороу. *Ҡулынан бер эш килмәй, йөрөй шунда исем булып.*

● *Алтын ерҙә серемәҫ, яҡшы исем илдә серемәҫ.* Әйтем. *Арыҫлан үлһә — тиреһе ҡала, кеше үлһә — исеме ҡала.* Мәҡәл. *Кешенең яманатын һатҡансы, үҙеңдең яҡшы исемеңде сығар.* Әйтем. *Саҡырғандың исеме оло.* Әйтем. *Яҡшы исем малдан артыҡ.* Әйтем.

**ИСЕМ-АТАҠ: исем-атаҡ сығыу** насар дан, яманат таралыу. *[Үмәр:] Ҡыҙыңдың шул йыртҡыс көтөүсе менән исем-атағы сыҡһа, бел уны, муйыныңды өҙәрмөн!* Һ. Дәүләтшина.

**ИСЕМЛЕ** *с.* **1.** Айырым кешегә арнап исеме яҙылған, тәғәйенләп яҙып бирелгән. *Исемле балдаҡ. Исемле сәғәт.* ■ *Кейеҙбайҙы тотоп килтерәләр. Ҡараһалар, бармағында — батша ҡыҙының алтын йөҙөгө, кеҫәһендә исемле яулығы* (Әкиәттән).

**2.** Исеме танылған; билдәле, атаҡлы. *Тәүҙә балаларҙы, йәш үҫмерҙәрҙе көрәштерҙеләр.. Көрәш үҙенән-үҙе ҙурайып китте. Йәш батырҙар көрәшкә исемле батырҙарҙы саҡырырға тотондо.* Ш. Шәһәр. *Ул [Нух] Ташбатҡан ауылындағы исемле байҙарҙың барыһын да белә ине.* Ж. Кейекбаев.

**ИСЕМЛЕК** *и.* Кешеләрҙең исем, фамилияһын йәки төрлө нәмәнең исемен, атамаһын теҙеп яҙған ҡағыҙ. *Балалар исемлеге. Китаптар исемлеге. Исемлек төҙөү. Исемлеккә индереү. Исемлеккә әләгеү.*

♦ **Ҡара исемлек** капиталистик илдәрҙә, батша Россияһында, реакцион режимлы илдәрҙә яраҡһыҙ кешеләрҙең исеме теркәлгән йәшерен исемлек (кәрәк ваҡытта яза биреү, эштән сығарыу, ҡулға алыу һ. б. өсөн төҙөлә).

**ИСЕМЛӘНЕҮ** *к. төш. ҡар.* **исемләү**. *Исемләнгән бүләк. Исемләнгән сәғәт. Исемләнеп йөрөү. Исемләнеп йөрөтөлөү.* ■ *Минең тыуып-үҫкән төйәгем Таһир ауылы [Әбйәлил районы] тип исемләнә.* С. Кулибай. .. *Хәнифәгә исемләнгән бындай йылы һүҙҙәр, изге теләктәр тәҡдимдәр кенәгәһенә күп яҙылған.* Ә. Вахитов.

**ИСЕМЛӘҮ** *к.* **1.** Ниндәйҙер исем менән атау, исем биреү. *Батыр Йәнйегет хөрмәтенә ауылды Йәнйегет тип исемләйҙәр.*

**2.** *р. мәғ.* **исемләп** Үҙ исеме менән атап. *Исемләп сығыу. Исемләп әйтеү. Исемләп йөрөтөү.*

**3.** *р. мәғ.* **исемләп** Ниҙелер бер кеше исеменә тәғәйенләп. *Ауылдың муллаһы менән бер-ике ҡарты килеп, ваҡ-төйәк нәмәләрҙе бүлеп, һәр беребеҙгә исемләп киттеләр.* М. Ғафури.

**ИСЕМЛӘШЕҮ** *к. лингв.* Формаль яҡтан үҙгәрмәгән көйө исем төркөмөнә күсеү (мәҫ. «ҡыҙҙар ҡыҙылды ярата» тигәндәге «ҡыҙыл» һүҙе). *Исемләшкән һүҙҙәрҙең алдында аныҡлаусы булырға мөмкин.*

**ИСЕМҺЕҘ** *с.* **1.** Йәмғиәттә, кешеләр араһында билдәле булмау, танылмау; данһыҙ, шөһрәтһеҙ. *Исемһеҙ кеше. Исемһеҙ булыу.*

**2.** Ҡултамғаһыҙ, имзаһыҙ. *Исемһеҙ хат.*

● *Исемһеҙ булғанса малһыҙ бул.* Мәҡәл.

**ИСЕМ-ФАМИЛИЯ** *и. йыйн.* Кешенең исеме менән фамилияһы. *Исем-фамилияны яҙыу.* ■ *Сәғиҙә уға [Зыяға] исем-фамилияһын әйткәс, ул урынынан ҡуҙғала биреп ҡуйҙы.* М. Тажи.

**ИСЕМ-ШӘРИФ** *и. йыйн.* Кешенең абруйы һәм дәрәжәһе.

**ИСКУ́ССТВО** *и. ҡар.* **сәнғәт.**

**ИСКӘТ** [*ғәр.*] *и. иҫк. кит.* Кешенең өнһөҙ ителеүе.

□ **Искәт итеү** (*йәки* **ҡылыу, әйләү**) өн-тауышһыҙ итеү, һүҙһеҙ итеү; һүҙҙән, илауҙан туҡтатыу; тымыҙыу.

**ИСҠАТ** [*ғәр.*] *и. иҫк. кит.* Нимәнеңдер ҡолатылыуы, төшөрөлөүе, ташланыуы.

□ **Исҡат итеү** (*йәки* **ҡылыу**) ҡолатыу, төшөрөү ташлау. *Бәғзе заттар файҙаһын белә тороп, кире булыр ғәҙеллекте ҡылып исҡат.* М. Ғафури.

**ИСЛАМ** [*ғәр.*] *и.* **1.** Донъяла киң таралыш алған диндәрҙең береһе; мосолман (Мөхәммәт пәйғәмбәр тарафынан 7 быуатта Ғәрәбстанда нигеҙләнгән). *Ислам дине.* ■ *1788 йылда Өфөлә ислам диненең бөтә Россия назараты төҙөлгән.* З. Шәрҡи.

**2.** (*баш хәреф менән*) Ир-ат исеме.

**ИСЛАНД** *и.* Исландияның төп халҡын тәшкил иткән милләт һәм шул милләттең бер кешеһе (герман телдәренең береһендә һөйләшә). *Исланд халҡы. Исланд ҡатыны. Исланд теле.*

**ИСЛАМИАТ** [*ғәр.*] *и. иҫк. кит.* Мосолманлыҡ.

**ИСЛАХ** [*ғәр.*] *и. иҫк. кит.* Ниҙеңдер үҙгәртеп ҡоролоуы; үҙгәреш; ислахат, реформа. *Мосолман иттифаҡы .. мәҙрәсәләр ислахы тураһында кәрәкле булған проекттар ҙа төҙөгән.* З. Шәрҡи.

□ **Ислах итеү** (*йәки* **ҡылыу**) яңыртыу; реформа үткәреү. *Һәр кеше үҙен-үҙе ҡылһын ислах, файҙа юҡ артыҡ һүҙҙе һөйләгәндән.* М. Ғафури. *Исмәғил аңлы шәкерттәрҙең «Ғәлиәне» ислах итеү кәрәк тигән фекеренә ҡушылып китә.* Ғ. Дәүләтшин.

**ИСЛАХАТ** [*ғәр.*] *и. ҡар.* **ислах.** *[Шәкерттәрҙең] теләгән ислахаттары шул: заманға нисбәтән генә булған.* М. Ғафури.

**ИСЛАХСЫ** *и. иҫк.* Яңылыҡ яҡлы, реформа яҡлы кеше. *[Мулла:] Мәҙрәсәлә уҡыған саҡта мин ислахсылар менән йөрөнөм.* С. Агиш.

**ИСМАҺА(М) 1.** *инш.* Бәләкәй генә бер өмөт, теләк, үтенес мохтаж итеп берәй нәмә әйткәндә ҡулланыла; һис булмаһа, һис юғында. *[Түрәбай:] Үлһәм яңғыҙ башым. Исмаһам, илем, ярлы халҡым өсөн даным ҡалыр.* Т. Хәйбуллин. — *Йә, һөйлә инде. Исмаһам, эсең бушап ҡалыр, әбекәй.* С. Мирзанов. / Сараһыҙлыҡ, үкенес белдереү өсөн әйтелә. *Бер ҙә һөйләшергә һүҙ табып булмай. Исмаһам, Зөләйха туташ та өндәшмәй.* Т. Йәнәби.

**2.** *инш.* Кемгә йәки нимәгәлер бәләкәй генә бер өҫтөнлөк биреп, айырыу өсөн ҡулланыла. *[Заятүләк — Һыуһылыуға:] Балҡан тауға күсәйек. Унан бөтө тирә-як күренеп тора, исмаһам.* «Заятүләк менән Һыуһылыу».

**3.** *киҫ.* Юҡлыҡ формаһындағы хәбәр менән килеп, уның мәғәнәһен көсәйтә. *Ҡарап барыр инек.. йә, исмаһам, ут күренмәй алғы ҡаланан.* Ғ. Сәләм.

**4.** *ымл.* Күберәк «бына» алмашы менән килеп, хуплауҙы, маҡтауҙы, һоҡланыуҙы белдерә. *[Әлфиә — Тәнзилә хаҡында:] Төҫө-һыны ҡалай! Һыу һөлөгө бит! Бына, исмаһам, кәләш!* С. Кулибай.

**ИСНАД** [*ғәр.*] *и. иҫк. кит.* Эш-ҡылыҡ йәки ғәйептең кемгәлер япһарылышы, йөкмәтелеше.

□ **Иснад итеү** (*йәки* **ҡылыу**) япһарыу, йөкмәтеү. *Бер-береһенә кәбәхәтлек ҡылып иснад, һәр бер тараф мөддәғиһен ҡылыр иҫбат.* М. Ғафури.

**ИСПАН** *и.* Испанияның төп халҡын тәшкил иткән милләт һәм шул милләттең бер кешеһе (Һинд-Европа телдәренең береһендә һөйләшә). *Испан халҡы. Испан теле.*

**ИСПАНСА** *р.* **1.** Испан телендә. *Испанса уҡыу. Испанса һөйләү.*

**2.** Испандарға хас. *Испанса бейеү. Испанса кейенеү.*

**ИСПРА́ВНИК** [*рус.*] *и. тар.* Революцияға тиклемге Россияла: өйәҙ полицияһының башлығы. *Исправник булыу.*

**ИСРАҠ** [*ғәр.*]: **исраҡ намаҙы** иртәнге намаҙ.

**ИСРАР** [*ғәр.*] *и. иҫк. кит.* Ныҡышмалыҡ, тырышлыҡ. *Унда илһам, унда исрар, унда рәхмәт, унда нур.* Б. Мирзанов.

□ **Исрар итеү** ныҡышмалыҡ, тырышлыҡ күрһәтеү.

**ИСРАФ** [*ғәр.*]: **исраф булыу** әрәмгә китеү, бушҡа туҙҙырылыу; бушҡа тәләф булыу. *Исраф булып бөтөү. Ҡойоп яуған ямғырҙан иген исраф була.* **Исраф итеү** (*йәки* **ҡылыу**) ҡәҙерен белмәй тотоноп, әрәм-шәрәм итеү; бушҡа тәләф итеү. *Исраф итеп бөтөү.* ■ *Ҡартая башлағас, кеше*

*һаранлана төшә тигәндәре шулдыр инде, күрәһең: тапкан-таянганды файҙаһыҙга исраф итәһе килмәй шул.* Ғ. Вәлиев. *Йукә агасын йукә һыҙырыу өсөн күплән кулланыу — байлыкты күрәләтә исраф итеү ул.* М. Хисмәтов.

**ИСРАФИЛ** [*гәр.*] (*баш хәреф менән*) *и.* **1.** *иҫк.* Дини ҡараш буйынса, ҡыямат көнөн белдереп сур (борғо) ҡысҡыртыр өсөн тәғәйенләнгән фәрештә. *[Сабир мулла:] Йәннәттең дә рәте киткән: хур ҡыҙҙары аҙгандар, .. Исрафил сурын югалткан. .. Әлхасил, бында эш бик хөрт, туғандар.* Б. Ишемғол.

**2.** Ир-ат исеме.

**ИСРАФЛАУ** *ҡ.* Бушҡа тәләф итеү, туҙҙырыу, эрәм-шәрәм итеү. *Аҡсаны исрафлау. Игенде исрафлап бөтөрөү.*

**ИСТЁРИК** [*рус.*] *и. һөйл.* Истерия менән ауырыған кеше.

**ИСТЕРЙК** *с.* **1.** Истерияға мөнәсәбәтле. *Истерик өйәнәк.* ■ *Шахнияз аптырап ҡарап тора ла, ҡапыл истерик рәүештә көлә башлай.* Ә. Мирзаһитов.

**2.** Истерия менән ауырыған, истерияға дусар булған. *Истерик ҡатын.*

**ИСТЁРИКА** [*рус.*] *и.* Истерия өйәнәге. *Истерикаға бирелеү.*

**ИСТЕРЙЯ** [*рус.* ⟨ *гр.*] *и.* Өйәнәк хәленә еткәнсә ярһыу, көлөү, илау менән билдәләнгән функциональ нервы-психика ауырыуы. / *күсм.* Ниндәйҙер йүнәлештәге ҡоторонҡо эшмәкәрлек. *Хәрби истерия.*

**ИСТИБДАД** [*гәр.*] *и. иҫк. кит.* Сикләнмәгән үҙ аллы власть; деспотизм. *Бер ҙә китмәҫ йөрәктә эҙ ҡалган — истибдадтың тырнаҡ ҡараһы. Онотормо шуны үсле күңел — инҡилапсы халыҡ балаһы!* Т. Йәнәби. *Истибдадтан йөҙәп башҡорт иле данлы сифаттарҙы юйҙырҙы.* Х. Ғәбитов.

**ИСТИБДАДЛЫ** *с. иҫк. кит.* Сикләнмәгән властҡа, деспотизмға ҡоролған. *Донъя һаман, истибдадлы хөкүмәт кеүек, үҙенең эшен теләгәнсә йөрөтә, теләгәнсә хөкүм итә.* М. Ғафури.

**ИСТИБРА** [*гәр.*]: **истибра ҡылыу** *иҫк. кит.* кесе ярау итеү, бәүел итеү. — *Аяҡ үрә истибра ҡылып йөрөй торган тар балаҡлы бер дәһрие арта икән Пәрүәҙҙең.* С. Ҡудаш.

**ИСТИҒДАД** [*гәр.*] *и. иҫк. кит.* Тыумыштан килгән һәләтлек, талант. *[Әмирханов:] Һәр милләттең үҙенә хас истигдад һәм ҡабилиәте бар. Ҡаҙаҡ халҡының ат өҫтөндә йөрөү маһирлыгын кем инкар итә? Был да шул ҡабилиәттән булган бер истигдад.* С. Агиш. *Һеҙҙә [башҡорттарҙа] бар истигдад һәм ҡабилиәт; уҡыуга, уҡытыуга ҡылыгыҙ гәҙәт.* С. Яҡшығолов.

**ИСТИҒМАЛ** [*гәр.*] *и. иҫк. кит.* Ҡулланыш, файҙаланыш. *Агас истигмалына тәьҫир итә торган башҡа төрлө мәхәлли шарттар игтибарга алынырга тейеш.* Р. Алушев.

□ **Истиғмал итеү** (*йәки* **ҡылыу**) ҡулланыу, файҙаланыу. *Тауарҙы истигмал итеү.*

**ИСТИҒРАБ** [*гәр.*] *и. иҫк. кит.* Аптыраш, таң ҡалыш.

□ **Истиғраб итеү** ғәжәпләнеү, таң ҡалыу.

**ИСТИҒФАР** [*гәр.*] *и. иҫк. кит.* Кешенең ғәфү үтенеүе.

□ **Истиғфар итеү** (*йәки* **ҡылыу**) ғәфү үтенеү. *Улар [кешеләр] насар гәҙәттәренән тәүбә вә истигфар ҡылдылар.* М. Ғафури.

**ИСТИДЛАЛ** [*гәр.*] *и. иҫк. кит.* Дәлилләнгән һығымта.

□ **Истидлал итеү** дәлилгә таянып һығымта яһау.

**ИСТИҠАМӘТ** [*гәр.*] *и. иҫк. кит.* Тоғролоҡ, дөрөҫлөк. *Һәр гилем истиҡамәт берлә мәшрут, бауырһаҡ татлы булыр баллаганда.* Аҡмулла.

**ИСТИҠАМӘТЛЕ** *с. иҫк. кит.* Тоғро. *[Мәзин:] Садрый мулла малайы үҙе истиҡамәтле, сауҙа итә, атаһы урынына мулла булырга әҙерләнә.* Д. Юлтый.

**ИСТИҠБАЛ** [*гәр.*] *и. иҫк. кит.* Алдағы көн, киләсәк.

**ИСТИҠЛАЛ** [*гәр.*] *и. иҫк. кит.* Бойондороҡһоҙлоҡ. *Бүгәс был болала башҡорттарҙың бик ҙур ярҙам күрһәтә аласагын якшы төшөнөп, башҡорттарга тулы истиҡлал бирергә .. вәгәҙә ҡылган.* Ғ. Фәхретдинов.

**ИСТИЛА** [*гәр.*] *и. иҫк. кит.* Бер илдең икенсе ил ерен һуғышып баҫып алыуы. *[Урыҫ гәскәрҙәре] башҡорт ерҙәренең иң якшы урындарын ҡаҙнага ҡалдырып, унда ҡалалар, ҡургандар, крепостар һалып, башҡорт ерҙәрен ҡулдарына төшөрөргә истила саралары күрәләр ине.* Ғ. Ғисмәти.

□ **Истила итеү** баҫып алыу, биләү. *Истила итә хоҙаның әмере барлыҡ зиһенемде.* Ғ. Иҫәнбирҙин.

**ИСТИЛАХ** [*гәр.*] *и. иҫк. кит.* Атама, термин. *Истилах комиссияһы.* ■ *Хикмәт хажиҙың байлыгы ата вә бабанан мираҫ булып ҡалмыш дәгел, бәлки Ҡазан сауҙагәрҙәре истилахынса сауҙага оҫталыҡтан килмеш ине.* Р. Фәхретдинов.

**ИСТИРАХӘТ** [*гәр.*] *и. иҫк. кит.* Тыныслыҡ, ял. *Табалар истирахәтте франкта, хәмелен вазих итәләр төрлө рәнектә.* М. Өмөтбаев.

□ **Истирахәт итеү** ял итеү. *Башҡалар йоҡлай. Уларҙың йәндәре тыныс, тәндәре истирахәт итә. Улар ҡайгыһыҙ.* М. Ғафури.

**ИСТИСҠА** [*гәр.*] *и. иҫк. кит.* Халыҡтың ямғыр теләп табыныуы. **Истисҡа намаҙы** ямғыр теләп уҡылған намаҙ. *[Ҡунаҡҡол:] Иртәгә йомanan һуң мулланы саҡырып әйтәм әле. Истисҡа намаҙына сыгырга кәрәк, ямгыр теләргә кәрәк.* Д. Юлтый.

**ИСТИСХАБ** [*гәр.*] *и. иҫк. кит.* Кемдеңдер юлдашлыҡҡа алыныуы.

□ **Истисхаб итеү** юлдаш итеп алыу.

**ИСТИФАДӘ** [*гәр.*] *и. иҫк. кит.* Ҡулланыу, файҙаланыу.

□ **Истифадә итеү** файҙаланыу, ҡулланыу. *Аҡмулланың бөтә камәләте ҡаҙаҡ сахраһында алынган вә ҡаҙаҡ шагирҙарынан истифадә ителгән ине.* Р. Фәхретдинов.

**ИСТИХАРА** [*гәр.*] *и. иҫк.* Берәй нәмә тураһында алдан төштә күреп белеү өсөн йоҡлағанда төшлөк һалдырып йәки төшлөк һалып, доға уҡып ятыу.

□ **Истихара итеү** (*йәки* **ҡылыу**) төшлөк һалыу, төшлөк ҡуйыу, кәрәкле төш күреү өсөн доға уҡып ятыу.

● *Булһа — бохара, булмаһа — истихара.* Әйтем.

**ИСТИХРАЖ** [*ғәр.*]: **истихраж итеү** (*йәки* **кылыу**) *иҫк. кит.* Һығымта яһау. *Сөнки бала һәр заманда бер нәмәне тәжрибә идәр, .. кулына бер еңел нәмәне алыр, елгә осорор, һауала йөрөүҙе истихраж итер, күккә карар..* З. Һаҙи.

**ИСТИХФАФ** [*ғәр.*] *и. иҫк. кит.* Еңел ҡараш, еңел мөнәсәбәт. *Һөнәрәбеҙ йә тәәннәт, йә истихфаф, үҙ кылган эшебеҙ юк иҫебеҙҙә.* Аҡмулла.

**ИСТИҺЗА** [*ғәр.*] *и. иҫк. кит.* Мыҫҡыл, мәсхәрә. *Ғәҙәте йә истиһза, йәки тәхкир, һүҙ һөйләмәҫ бирәүҙе жәрех кылмай.* Аҡмулла.

□ **Истиһза ҡылыу** (*йәки* **итеү**) мыҫҡыллау, мәсхәрәләү.

**ИСТОРИОГРАФ** *и.* Историография (1 мәғ.) өлкәһендәге белгес.

**ИСТОРИОГРАФИК** *с.* Историографияға мөнәсәбәтле. *Историографик хеҙмәт.*

**ИСТОРИОГРАФИЯ** [*рус.* ⟨ *гр.*) *и.* **1.** Кешелек йәмғиәтенең үҫеш тарихы, шул турала тупланған ғилемде һәм тарихи сығанаҡтарҙы өйрәнгән фән.

**2.** Билдәле бер дәүергә, быуатҡа йәки берәй проблемаға бағышланған тарихи яҙмалар йыйылмаһы. *Совет осоро историографияһы.*

**ИСТРЕБИТЕЛЬ** [*рус.*] *и.* Һауа һуғышында дошман авиацияһын юҡ итеү өсөн тәғәйенләнгән хәрби самолет. *Реактив истребитель. Истребителдә осоу.*

◆ **Лётчик-истребитель** истребитель авиацияһы лётчигы.

**ИСТӘБРАҠ** [*ғәр.*] *и. иҫк.* Алтын-көмөш еп-тәр ҡатыштырып һуҡҡан ебәк туҡыма. *Урыны ине Фирдәүестең — түр башы, сөндөс, истәбрактан ине хөлләһе.* Ш. Бабич.

**ИСТӘК** *и.* Башҡорттарҙың ҡаҙаҡ-ҡырғыҙҙарҙағы атамаһы. *[Балтаев:] Казармаларга барҙым, ундагы һалдаттар нугай, истәк егеттәре икән.* А. Таһиров.

**ИСТӘҮ** *к. кар.* **эҫтәү.**

**ИҪ** *и.* **1.** Онотмай башта һаҡлау һәләтлеге; хәтер, зиһен. *Иҫе якшы. Иҫе юк. Иҫкә алыу. Иҫкә төшөрөү. Иҫтә калдырыу. Иҫтә калыу. Иҫтән сыгарыу. Иҫтә тотоу.* ■ *Иҫеңдәме, былбыл, үткән яҙҙа, һин һайраган агас төбөндә, кем ине ул шунда косагымда, ай балкыган яҙҙың төнөндә?* Ш. Бабич. *Башкортостан! Күңел тула, үткәнең иҫкә алһам.* М. Туҡтамышев. *Беҙҙең халык ялкау ҙа инде: маяк каҙауҙы ошо көнгә тиклем иҫтәренә лә төшөрмәгәндәр.* Д. Юлтый. *Ниңә һуң башта ук был уйҙар уның [Янһаровтың] иҫенә килмәгән?* Б. Бикбай.

**2.** Тирә-йүндәге мөхитте һиҙеү һәләтлеге; аң, һуш. *Иҫ алыу. Иҫте югалтыу.* ■ *Маян .. түшәгенә иҫе ауып йыгыла.* «Ҡуҙыйкүрпәс менән Маянһылыу». *[Фатима:] Бала кеше шул әле, иҫ белмәй.* Б. Бикбай. *Хөрмәт иҫенә килә алмай, аңшайып байтак торҙо.* Ф. Иҫәнғолов. *Иртәгеһен бай иҫенә килеп, башын калкытып караһа, янында бер кем дә юк* (Әкиәттән). **Иҫ инеү** 1) әҙ генә ҙурайып төрлө нәмәне аңлай, һиҙә башлау (балаға ҡарата). *Бала алдында юк-барҙы һөйләмә, уга иҫ ингән хәҙер;* 2) һушты юғалтҡан ерҙән һушҡа килеү. *Айыуголак аҫка барып төшкәс, бик оҙак иҫәнгерәп яткан. Шунан иҫ ингәс, ауыр итеп көрһөнгән дә тороп киткән* (Әкиәттән). **Иҫ китеү** 1) аң, һуш юғалтыу. *Бәhлеүән байтак вакыт иҫе китеп ята* (Әкиәттән); 2) *күсм.* ғәжәпкә ҡалыу, аптырау. *Иҫ китерлек эштәр эшләнек, Салауат тигән иргә таянып* (Халыҡ йырынан); 3) *күсм.* ғәжәпләнеп һоҡланыу. **Иҫ ҡороу** аң-һуш юғалғандай булыу. *Һуңгы айырылышыу көндәремдә хәтерләп, иҫем короп, ултырганмын да ултырганмын.* Н. Мусин. **Иҫте йыйыу** уйлай, аңлай алыу хәленә ҡайтыу. *Иҫемде йыйганда, Сания ятакка инеп киткән ине.* Н. Мусин. **Иҫте китәреү** 1) аңды, һушты алыу; һуштан яҙҙырыу. *Теге карт Имән батырҙы иҫен китәргәнсә түкмаган да, каҙандагы ашты күтәреп ашап, сыгып киткән* (Әкиәттән); 2) *күсм.* ғәжәпкә ҡалдырыу; аптыратыу. *Дингә лә, законга ла һыймай торган гәжәп хәл бөтә ауылдың иҫен китәрҙе.* Һ. Дәүләтшина. **Иҫтән тайыу** (*йәки* **яҙыу**) 1) аң, һушты юғалтыу; иҫһеҙ булыу. *Йыгылып китә бала шунда иҫтән тайып.* «Бабсаҡ менән Күсәк»; 2) ныҡ аптырау. *Фәтүәһен таптым, егеттәр, йөрөмәгеҙ иҫтән яҙып. Аңлагыҙ ки: кыҙҙарга кыҙмай йөрөү, шикһеҙ, яҙык.* Ш. Бабич. **Иҫ үңгәләү** аң, һуш томаланыу. *Түрәбай, иҫе үңгәләп, ултыра төштө.* Т. Хәйбуллин.

**3.** Тән, ағзаның һиҙеү-тойоу һәләтлеге; һуш. *Яраланган аягымдың иҫе юк.*

**4.** *У.-в. клш.* **иҫемдә** *һөйл.* Йәтәс айырышҡан кешенең ҡулынан нәмә алғанда отолмаҫ өсөн әйтелә.

◆ **Ике иҫле** аҡылға самалы; һәтәү. **Иҫ белгәндән** (*йәки* **белә башлағандан**) аң, аҡыл инә башлаған саҡтан; бала йәштән. *Мин иҫ белгәндән беҙ ошо ауылда торабыҙ.* **Иҫе дөрөҫ** уйлау, фекер итеү һәләте юғалмаған. **Иҫенә лә инеп сыҡмай** кешенең ниҙелер уйламауына ҡарата әйтелә; уйлап та бирмәй. **Иҫенә** (*йәки* **иҫеңә**) **төшкән икән** ваҡыты үткәс, һуңлап бер эшкә тотонған кешегә шелтәләп әйтелә. *[Үмәр:] Яңы иҫенә төшкән икән Ныязголдоң! Башта ук әҙәмгә һанап үҙе яусылаткан булһа, был көнгә, был хурлыкка төшмәй инек.* Һ. Дәүләтшина. **Иҫең бар булғыры!** ниҙелер онотоп, үртәнгәндә әйтелә. **Иҫ итеү** алдан белеү. **Иҫ киткес** ғәжәп итерлек; ғәйәт, сикһеҙ, бик. *Иҫ киткес ҙур. Иҫ киткес матур.* ■ *Иҫ киткес оҫта булган инде ул һөнәрсе!* З. Биишева. **Иҫең ҡороғоро** ниҙелер онотҡанда үртәнеп әйтелә.— *Иҫең корогоро, анау Басир карт мәрхүмдең улы кем һуң әле?* Һ. Дәүләтшина.

● *Иҫең киткән иҫке сәкмәнгә.* Әйтем. *Иҫ итмәгән сир яман.* Әйтем. *Иҫәрҙең иҫе булмаҫ, ялкауҙың эше булмаҫ.* Әйтем.

**ИҪ-АҠЫЛ** *и.* Аңлау, фекер итеү һәләтлеге. *Иҫ-акылы бөткән. Иҫс-акылы юк.*

◆ **Иҫ-аҡыл китеү** бик ныҡ аптырау; шаҡ ҡатыу. *Шул сак әбей .. бик һылыу бер йәш кыҙга әүерелгән. Егеттең быны күреп иҫ-акылы киткән* (Әкиәттән). **Иҫ-аҡыл ҡороу** 1) бик ныҡ аптырау. *Ҡылыгыңа иҫ-акыл короно;* 2) ныҡ ыҙа сигеү, яфаланыу. *Алыҫтан бесән ташый-ташый иҫ-акылым короно.* **Иҫ-аҡыл юғалыу** нисек итергә белмәй аптырау. **Иҫ-аҡылға һыймау** ғәжәп итер-

лек, хайраи ҡалырлыҡ булыу. *Иҫ-аҡылға һыймаҫлыҡ эш.*

**ИҪАУАЛ** *с. диал.* Иҫәүән. *Иҫауал Зөлкәрнәй ни уйламаған-нитмәгән, Аласыбарҙы һатҡан да ебәргән* (Әкиәттән).

**ИҪАУАН** *с. диал.* Иҫәүән.

**ИҪБАТ** [*ғәр.*] *и.* Ниҙеңдер дөрөҫлөгөн раҫлау өсөн килтерелгән дәлил.

□ **Иҫбат итеү** ниҙелер дәлилләп нығытыу, иҫбатлау. *Индрил .. үҙ фәлсәфәһенең нигеҙе дөрөҫ булыуын иҫбат итергә керешә.* Д. Юлтый.

**ИҪБАТЛАНЫУ** *ҡ. төш. ҡар.* **иҫбатлау.**

**ИҪБАТЛАТЫУ** *ҡ. йөк. ҡар.* **иҫбатлау.**

**ИҪБАТЛАУ** *ҡ.* Дәлилдәр менән раҫлау. *Фән иҫбатлауынса, бешмәле хайуандың һөтөндә, шайығында, тиҙәгендә миллионлаған .. микроб бар.* В. Ғүмәров.

**ИҪЕМЛӘҮ** *ҡ. диал.* Иһәнәү.

**ИҪЕРГӘНЕҮ** *ҡ.* Иҫте юйыу, иҫһеҙ булыу.

**ИҪЕРГӘҮ** *ҡ. диал.* Ҡыҙғаныу, йәлләү.

**ИҪЕРЕК** *с.* Иҫерткес эсемлек тәьҫирендәге; айныҡ түгел. *Иҫерек кеше. Лаяҡыл иҫерек.* ■ *Хажиғәли иҫерек кеше һымаҡ башын тота алмай, ултырған еренән сайҡалып ҡуйҙы.* М. Тажи./ Иҫергән, ҡыҙмаса булған кешеләргә хас. *Иҫерек тауыш.* ■ *Идрис ҡарт .. ҡарлыҡҡан иҫерек тауыш менән йырлай-йырлай, ауатүнә урам буйлап атлай.* З. Биишева. **Иҫерек баш** һәр ваҡыт эсеп иҫереп йөрөгән кешегә әйтелә.

● *Бер иҫеректең буш һүҙенән икенсе иҫерек мәғәнә табыр.* Әйтем. *Иҫерек аҡсаһын эсмәй, аҡылын эсә.* Әйтем.

**ИҪЕРЕҮ** *ҡ.* **1.** Иҫерек булыу, иҫереккә әйләнеү. *Лаяҡыл иҫереү. Иҫереп йығылыу. Эсеп иҫереү. Иҫерееүе еткән.* ■ *Ләх иҫергән егеттәр ҡайныһы-ҡайҙа тәгәрәне.* Ф. Иҫәнғолов.

**2.** Еҫ, газ һ. б. тәьҫире менән ағыуланыу. *Төтөнгә иҫереү.* ■ *[Сәғиҙә:] Йыйылышта бер туҡтауһыҙ тарталар, тәмәке еҫенә иҫерҙем.* М. Тажи.

**3.** *күсм.* Ниндәйҙер тойғонаи, хуш еҫтән баш әйләнеп онотолоу, рәхәтлек хисе кисереү. *Мөхәббәттән иҫереү. Бәхеттән иҫереү. Шатлыҡтан иҫереү.* ■ *Тәмле еҫегеҙгә иҫергәндә, мәдхиәләр йырлап йөрөрмөн.* Ш. Бабич. *Беҙҙең көндәр бындағы иректән иҫереп үтәләр.* Д. Юлтый.

♦ **Йоҡоға иҫереү** йоҡо тәьҫирендә иҙерәп, иҫте йыя алмаҫ булыу. *Мин йоҡоға иҫергән баш менән уға ҡарап ҡалдым. Уның ниңә уятҡанын аңламаным.* Д. Юлтый.

**ИҪЕРЕШЕҮ** *ҡ. урт. ҡар.* **иҫереү.**

**ИҪЕРТЕҮ** *ҡ.* **1.** Иҫерек хәлгә ҡилтереү. *Иҫертеп һалып ҡуйыу.* ■ *[Күктолпар — Ҡуҙыйкүрпәскә:] Егетем, һине туйҙа иҫертеп аяҡтан йығырға ла, тышҡа алып сығып үлтерергә уйлайҙар.* «Ҡуҙыйкүрпәс менән Маянһылыу». *Иҫертерлек хуш еҫле йәйрәп ятҡан еребеҙ!* «Урал батыр».

**2.** Газ, һ. б. еҫ менәи ағыулау. *Газға иҫертеү.*

**3.** *күсм.* Көслө тойғо, хуш еҫ һ. б. менән башты әйләндереү. *Шатлыҡҡа иҫертеү.* ■ *Ғишҡың ғына мине ай иҫертә, әйтеп кенә аңлар ҙа кеше юҡ* (Халыҡ йырынан).

**ИҪЕРТКЕС** *с.* **1.** Составында спирт булған, иҫертә торған. *Иҫерткес эсемлектәр.*// *Иҫерткес эсеү.*

**2.** *күсм.* Онотолорлоҡ дәрәжәлә нескә хискә бирелдереп онотолдорған, рәхәтлек кисерткән. *Иҫерткес хистәр.*

**ИҪЕҮ** *ҡ.* Бер йүнәлештә хәрәкәт итеү (елгә ҡарата); өрөү. *Иҫте елдәр сайҡалдырып ҡамыштар башын.* Р. Ниғмәти. *Ерәнсәй ҙә атым ай ялдарын ҡиблаларҙан иҫкән ел тарай* (Халыҡ йырынан).

♦ **Ел(дәр) иҫеү** *ҡар.* **ел. Иҫкән ел кеүек** **тиҙ** үтә торған нәмәгә әйтелә. *Вәй, ғүмерҙәр, иҫкән ел кәүек олағып торалар.* Т. Хәйбуллин.

**ИҪКЕ** [1] *с.* **1.** Тотоноу, ваҡыт үтеү арҡаһында таушалған, туҙған; *киреһе* яңы. *Иҫке арба. Иҫке быйма. Иҫке өй. Иҫке кейем.* ■ *Түрҙә ҡалайлы иҫке һандыҡ. Уның өҫтөндә бер-ике башҡорт балаҫы..* Ғ. Дәүләтшин. *Саматтың өҫтөндә әлеге шул иҫке пинжәк, башында ҡояшҡа янып бөткән кепкаһы.* Ә. Бикчәнтәев./ Тәүге сифатын юғалтҡан, боҙолған. *Иҫке төпрә.*/ Элек булып, ҡулланыу, файҙаланыуҙан сыҡҡан. *Иҫке аҡса. Иҫке мода.*

**2.** Элек-электән булып килгән; күптәнге. *Иҫке ауыл. Иҫке дуҫ. Иҫке гәҙәт.* ■ *[Дутов] отрядтары береһе лә таралмайса, иҫке гәҙәт менән яландарҙы гиҙеп,.. ауылдарҙы талап йөрөй башланылар.* З. Шәрҡи. *Атҡа менегеҙ, ирҙәр, ағалар, асылһын әйҙә иҫке яралар.* Салауат Юлаев./ Электән билдәле булып, әһәмиәтен юғалтҡан. *Иҫке хәбәр.*

**3.** Үткәнгә, элекке ваҡыттарға ҡараған, бөгөнгө талаптарға яуап бирмәгән. *Иҫке ысул. Иҫке йыр. Иҫке стиль менән эшләү.*/ Иҫке йәмғиәт ҡоролошона ҡарата. *Иҫке армия. Иҫке донъя. Иҫке тәртип. Иҫке хөкүмәт.* ■ *[Ҡарттар] үҙҙәре белгән иҫке армия менән яңы армияны сағыштырып .. хәҙерге Ҡыҙыл Армияны һораштылар.* Ғ. Дәүләтшин. *[Тимер:] Иҫке ҡалдыҡтарҙы беҙ күптән .. көлгә осорғанбыҙ.* Б. Бикбай.

**4.** Үткән, элекке (ваҡытҡа ҡарата). *Был йәйләү иҫке замандарҙан бирле маҡталып килгән бай йәйләүҙәрҙең береһе.* Һ. Дәүләтшина.

**5.** Нимәнеңдер алдынан булған, элекке. *Иҫке адрес.*/ Үткән йылғы урожайға ҡараған, былтырғы. *Иҫке бәрәңге.* ■ *Яңы келәттә яңы арыш, иҫке келәттә иҫке арыш* (Халыҡ йырынан).

**6.** Хәҙергенән алда төҙөлөп, яңыһы менән бер рәттән ғәмәлдә булған (күберәк ауыл, ҡала атамаларына ҡушылып йөрөтөлә). *Иҫке Собханғол ауылы. Иҫке Ҡорос ауылы.* ■ *Ана,— тине Ғәйшә,— ҡыҙғылт йортто күрәһеңме? Ул суйын ҡоя торған завод. Ул заводтың был яғын хәҙер иҫке Өфө тип йөрөтәләр.* С. Агиш. *Теге заман Иҫке Ҡайынлыла торған сакта, Аҡселән йылғаһы яҙ һайын ярҙы умырып ауылға яҡынлаша башла[ғайны].* Б. Бикбай. *Уны [Шаһиҙә әбейҙе] Үмәр үҙҙәренен элекке иҫке өйҙәренә башҡа сығарып, ағай-энеһе йыйылып бер һыйыр алып биреп ҡуйҙылар.* Һ. Дәүләтшина.

♦ **Иҫке ауыҙҙан яңы һүҙ** *ҡар.* **ауыҙ. Иҫке ер** бер нисә йыл сәселгән ер. **Иҫке йорт** 1) тыуып үҫкән йорт. *Бер саҡ шулай килен үҙенең*

*тыуған-үҫкән, кендек киҫкән еренә, иҫке йортҡа, ҡунаҡҡа барып килергә уйлаған* (Әкиәттән); 2) халыҡтың элекке торған урыны. **Иҫке стиль** беҙҙең эраға тиклем 46 йылда Юлий Цезарь индергән, рустарҙа христиан дине менән 10 быуатта ҡабул ителеп, Бөйөк Октябрь Социалистик революцияһына тиклем ҡулланылған йыл иҫәбе атамаһы (20 быуатта хәҙерге йыл иҫәбенән 13 көнгә һуң йөрөгән); Юлиан календаре.

● *Иҫке йорттоң ҡәҙерен яңыһында белерһең.* Әйтем. *Яңы колаксынға ышанып, иҫке колаксынды утҡа яҡма.* Әйтем. *Яңыны яңы иткән иҫке.* Әйтем.

**ИҪКЕ**[2] *и. диал.* **1.** Йүргәк. *Баланы иҫкегә төрөү.*

**2.** Сепрәк балаҫ.

**ИҪКЕЛЕК** *и.* Хәҙерге шарттарға тура килмәгән, элеккеиән, боронғонан һаҡланған ҡараш, йола һ. б. *Иҫкелек ҡалдығы.*

**ИҪКЕЛӘР** *и. тар.* Меңдәр ырыуына ҡараған бер нисә араны берләштергән төркөмдөң атамаһы. *Беҙ сей башҡорттар, иҫкеләр. Бөрйән, Таллы, Ҡыпсаҡ — иҫкеләрбеҙ* (Хикәйәттән).

**ИҪКЕ-МОҪҠО** *и. йыйн.* Иҫкереп, туҙып бөткән кейем-һалым. *[Шәһиҙә] иҫке-моҫҡоға төрөп, һикегә һалған ир баланы ҡарай.* Ғ. Хәйри. *Әсәйем бәләкәй шәмен яндырып, иҫке-моҫҡоларын ямарға ултыра.* Д. Юлтый.

♦ **Иҫке-моҫҡо йыйыусы** *ҡар.* **ҡырлайсы.**

**ИҪКЕРЕҮ** *ҡ.* **1.** Оҙаҡ файҙаланыу, тотоноу һәм күп ваҡыт үтеү сәбәпле таушалыу, туҙыу. *Кейем иҫкергән. Өй иҫкергән. Иҫкергән техника.*

**2.** Оҙаҡ һаҡланып, сифат яғынан үҙгәреү, боҙолоу. *Иҫкергән май.*

**3.** Заман талабына, заман ихтыяжына яуап биреүҙән үтеү. *Иҫкергән ҡараш. Иҫкергән ысул. Иҫкергән мода.*

**ИҪКЕРТЕҮ** *ҡ.* **1.** Оҙаҡ файҙаланып йәки әрһеҙ тотоноп, яңылығын бөтөрөү; таушалдырыу, туҙҙырыу. *Кулмәкте иҫкертеү. Юрғанды иҫкертеү. Иҫкертеп бөтөү.*

**2.** Үҙ ваҡытында файҙаланмай йәки оҙаҡ һаҡлап боҙоу. *Икмәкте иҫкертеү. Майҙы иҫкертеү.*

**ИҪКЕСЕ** *и. һөйл.* Иҫке замандағы ғәҙәт, тәртипте яҡлаусы.

**ИҪКЕСЕЛ** *с. һөйл.* Иҫке замандағы ғәҙәт, тәртипте яҡлаусан, иҫкене ҡыуыусан. *Иҫкесел кеше.*

**ИҪКЕСЕЛЕК** *и.* Тормош һәм фекер-ҡараштағы иҫке (4 мәғ.) күренештәр. *Иҫкеселеккә ҡаршы көрәшеү. Иҫкеселекте бөтөрөү.*

**ИҪКЕСӘ** *р.* **1.** Элек булған, электән килгән ысул, тәртип, ғәҙәт-йола буйынса; элеккесә. *Иҫкесә эшләү. Иҫкесә йәшәү.* ■ *[Шәрәф-Тимергә:] Вафатына бер аҙна булды инде. .. Иҫкесә күмделәр. Әсәйең ҡарт кеше ине бит инде, ни эшләмәк кәрәк.* Б. Бикбай. / Элекке хәлендәгесә. *Эй, Хәлим Искәндәров, куҙғалма һис ел иҫмәйсә, һәм Троицкийҙы ла ҡуҙғатма, торһон иҫкесә!* Ш. Бабич.

**2.** *һөйл.* Ғәрәп алфавитынса. *Иҫкесә яҙыу. Иҫкесә уҡый белеү.*

**ИҪКӘЛЕП** *и. һөйл.* Латинды ҡабул иткәнгә тиклем башҡортта йөрөгән ғәрәп алфавиты. *Мәҙрәсәгә йөрөп, иҫкәлеп танығас, уның [Ғатаулла бабайҙың] рус мәктәбенә барып уҡығыһы килә.* Р. Солтангәрәев.

**ИҪКӘРЕҮ** *ҡ.* Алдан һиҙеү, абайлау. *Көндән-көн яҡынлашып килгән һабан туйҙарын иҫкәрепме, .. оҙон яллы сабыш аттары кешнәп ебәрә.* Ғ. Лоҡманов.

● *Иҫкәрмәҫ түңгәк саңа ауҙарыр.* Мәҡәл.

**ИҪКӘРМӘ** *и.* **1.** Телмәрҙең йәки яҙманың айырым урындарына ҡарата бирелгән бәләкәй генә өҫтәмә аңлатма. *Иҫкәрмә индереү (биреү). Текстҡа бирелгән иҫкәрмә.*

**2.** Нимәлер (телмәр, текст һ. б.) буйынса әйтелгән, яҙылған ҡыҫҡа фекер. *Тәнкитле иҫкәрмә. Иҫкермә яһау.*

**ИҪКӘРМӘҪТӘН** *р. кит.* Уйламаған, көтмәгән ерҙән; аңғармаҫтан. *Иҫкәрмәҫтән килеп сығыу. Иҫкәрмәҫтән әйтеп ташлау.* ■ *Шул [хәл] беҙҙе иҫкәрмәҫтән легаль тормошҡа сығырға мәжбүр итте.* Д. Юлтый.

**ИҪКӘРТЕЛЕҮ** *ҡ. төш. ҡар.* **иҫкәртеү.**

**ИҪКӘРТЕҮ** *ҡ.* **1.** Берәр эш-хәлде белдереү, һиҙҙереү. *Сәлмән һүҙҙе икенсегә бора,.. ағаларына алдан иҫкәртеп ҡуймаҡсы була* (Әкиәттән).

**2.** Берәр эш, ҡылыҡ хаҡында алдан әйтеү; иҫкәртмә яһау.— *Һуңғы тапҡыр иҫкәртәм,— тип ҡыҫҡыра атаман ҡылысын ҡынынан һурып,— һуңғы тапҡыр! Үкенерлек булмаһын!* Ә. Вахитов.

**3.** Низелер булдырмаҫ өсөн алдан сара күреү. *Ауырыуҙы иҫкәртеү. Енәйәтте иҫкәртеү.*

**ИҪКӘРТМӘ** *и.* Тәртип боҙоусыға киҫәтеп әйтелгән һүҙ; шелтә. *Ҡаты иҫкәртмә. Иҫкәртмә яһау.* ■ *[Йыһаншин:] Әгәр Солтанов .. ныҡлы һынылыш яһамай икән, эшенән алып, судҡа бирергә кәрәк. Аңла, Солтанов, был һиңә һуңғы иҫкәртмә.* Б. Бикбай./Нимәнәндер (ауырыу һ. б.) һаҡлау өсөн алдан белдерелгән кәңәш һ. б. *Врачтың иҫкәртмәһе. Иҫкәртмә яһау.*

**ИҪКӘРТМӘҪТӘН** *р.* **1.** Алдан әйтмәй, белдермәй; ҡапыл. *Иҫкәртмәҫтән башланған һөжүм.*

**2.** *ҡар.* **иҫкәрмәҫтән.** *Иҫкәртмәҫтән тип атылды, Порт-Артурҙы үт алды. Иҫкәртмәҫтән тип атылғас, беҙҙең ғәскәр буталды* (Бәйеттән).

**ИҪЛЕ** *с.* Иҫе, хәтере бик яҡшы. *Иҫле ҡарт.*/ Фекере, зиһене яҡшы; зирәк. *Иҫле бала. Иҫле булыу.*

**ИҪЛӘМӘҪТӘН** *р.* Уйламағанда, аңғармаҫтан; ҡапыл. *Иҫләмәҫтән йығылып китеү.* ■ *Иҫләмәҫтән атынан осоп төшкән һыбайлы аңын йыя алмай аҙаплана.* Я. Вәлиев.

**ИҪЛӘҮ** *ҡ.* **1.** Онотмай, хәтерҙә тотоу. *Бала саҡты иҫләү.* ■ *Ул [Оморҙаҡ бабай] үҙ ғүмерендә .. йөҙҙән ашыу бүре һуҡҡан. Төлкө һыуһар, бурһыҡтарҙың иҫәбен иҫләй ҙә алмай.* Ж. Кейекбаев.

**2.** Иғтибар итеп, хәтергә һалыу. *Урманға ингәндә иҫләп бар, сыҡҡанда шул юлдан сығырһың.*

**3.** Иғтибар биреү, абайлау. *Эргәмдә .. кеше торғанын күреп, аптырап ҡалдым. Иҫләберәк ҡараһам, Хәйбулла бабай, имеш.* Н. Мусин.

*Беҙ ҙә eләк йыйыуға әүрәп, уның [Рәйестең] айырылып ҡалғанын иҫләмәгәнбеҙ.* Н. Мусин.

**ИҪНӘТЕҮ** *к. эйһ. ф. кар.* **иҫнәү.** *Йоҡо ла килгән. Иҫнәтә.* С. Агиш.

**ИҪНӘҮ** *к.* Йоҡо баҫҡанда, ирекһеҙҙән ауыҙҙы киң асып, бик тәрән тын алыу; иһәнәү. *Оҙон итеп иҫнәү.* ■ *[Айбулат] ҡысҡырып иҫнәне, быуындары шытырлағансы кирелде.* Һ. Дәүләтшина.

**ИҪТӘЛЕК** *и.* **1.** Үткән көндәрҙән иҫтә ҡалған хәл, ваҡиға, күренеш һ. б.; хәтирә. *Матур иҫтәлек. Данлы йылдар иҫтәлеге.* ■ *Уның [Ныязғолдоң] бөгөнгө ҙур еңеү шатлығын һис нindәй күңелһеҙ иҫтәлектәр менән ҡуләгәләткеһе килмәй ине.* Һ. Дәүләтшина.

**2.** *күпл.* Үткән көндәрҙәге хәл, ваҡиға һәм кешеләрҙе иҫкә төшөрөп яҙған әҫәр. *Иҫтәлектәр яҙыу.*

**3.** Үлгән кешенең хәтирәһе, ядкаре. *Шағир иҫтәлегенә арналған ҡисә.* ■ *Ҡарт Черниговтың бейеккә күтәрелгән горур башнялары башҡорт халҡының батыр улы, Советтар Союзы геройы Тәфтизан Таһир улы Миңлеголовтың .. мәңге юйылмаҫлыҡ иҫтәлеген һаҡлай.* Ш. Бикҡол.

**4.** Кемдең йәки нимәнеңдер хәтирәһен һаҡлаған нәмә. *Иҫтәлек итеп биреү. Иҫтәлек итеп һаҡлау.* ■ *Ул [Аҡбулат] иҫтәлек өсөн миңә ошо көршәкте алып килгән ине.* З. Биишева./ Иҫтә һаҡлаһын өсөн кемгәлер ҡалдырылған яҙма. *Егеттәр, ҡыҙҙар альбомдарына иҫтәлек яҙыштылар, бер-береһен онотмаҫҡа, ташлашмаҫҡа, хатлашып торорға вәғәҙә ҡуйыштылар.* М. Тажи. *Йырҙар яҙҙым Урал ҡаяһына, иҫтәлектәр булып ҡалһын тип* (Халыҡ йырынан).

◆ **Иҫтәлек дәфтәре** йәштәрҙең йәшлек хәтирәһе итеп үҙ-ара йыр, шиғыр яҙышыр өсөн тотҡан махсус дәфтәре. *Иҫтәлек дәфтәре тотоу.*

**ИҪТӘЛЕКЛЕ** *с.* **1.** Иҫтән сыҡмаҫлыҡ, хәтерҙә ҡалырлыҡ, онотолмаҫлыҡ. *Иҫтәлекле көн./* Әһәмиәтле ваҡиғаға бәйле булыуы менән билдәле. *Өфөлә Владимир Ильичтың исеме менән бәйле булған иҫтәлекле урындар һәм йорттар бар.* «Совет Башҡортостаны», 1965, 14 февраль.

**2.** Әһәмиәтле ваҡиғаға арнаулы. *Иҫтәлекле бүләк. Иҫтәлекле миҙал.*

**ИҪҺЕҘ** *с.* **1.** Иҫе, һушы юҡ, иҫе, һушы юғалған, иҫтән яҙған. *Иҫһеҙ булыу.//Иҫһеҙ илау.* ■ *Ҡыҙ мәскәйҙең башын ҡарай башлаған икән — иҫһеҙ булған да йығылған* (Әкиәттән).

**2.** Тиҙ онота торған, хәтерһеҙ. *Иҫһеҙ кеше./* Уйлап, аңлап эшләй белмәгән; аңра.

**ИҪҺЕҘЛӘНЕҮ** *к.* **1.** Иҫте, һушты юғалтыу. *Иҫһеҙләнеп ҡолау./* Һиҙеү, тойоу һәләтен юғалтыу. *Минең ҡолаҡ шаулап китте. Беләк иҫһеҙләнде.* Д. Юлтый.

**2.** Хәтерҙән яҙыу, иҫһеҙгә әйләнеү; хәтерһеҙләнеү.

**ИҪҺЕҘ-ОҪҺОҘ** *с. һөйл.* Бөтөнләй иҫһеҙ. *Иҫһеҙ-оҫһоҙ булыу.* ■ *[Бибисара:] Кейәү балаҡай, .. мулланы иҫһеҙ-оҫһоҙ итеп туҡмап ташлағандар бит.* З. Биишева.

**ИҪ-ҺУШ** *и. йыйн.* Иҫ һәм һуш. *[Һалдат] аңын юғалтып, иҫ-һуш аралаш һаташа башлай.* Ғ. Хөсәйенов.

◆ **Иҫ-һуш ҡороу** *шул уҡ* **иҫ-аҡыл ҡороу** (*ҡар.* **иҫ-аҡыл**). *[Мозафар:] «Әсәй, ошонан башлап, Сәкинә ҡыҙың түгел, килененң була»,— тигәс, әбейҙең иҫе-һушы ҡороно.* Н. Мусин.

**ИҪӘЙЕҮ** *к.* Иҫ белер йәшкә етеү; аҡыллаяныу. *Иҫәйгәс, балам, үҙең аңларһың әле.*

**ИҪӘН** *с.* **1.** Донъяла бар, тере; киреһе үле. *Иҫән йөрөү. Иҫән ҡалыу. Иҫән тороу.* ■ *[Ҡатын:] Алла ҡушһа, иҫән булырбыҙ, ҡушмаһа, үлербеҙ.* Д. Юлтый. *Минең әсәй әлек, иҫән саҡта, байға эшләп тамаҡ туйҙырған.* Ғ. Амантай.

**2.** Ауырыуһыҙ, сырхауһыҙ, һау-сәләмәт. *Иҫән кеше. Иҫән булыу.*

**3.** Зыян-зарарһыҙ, теүәл, бөтөн. *Килендең ҡайтыуына .. бер генә көлсә иҫән ҡалған, ти* (Әкиәттән).

◆ **Баш(ы) иҫән** үлмәгән, тере; иҫән-һау. *[Ҡыҙ:] Егет, башың иҫән саҡта сығып кoтол* (Әкиәттән). **Иҫән булһаҡ** *инш.* теләкте, хыялды һөйләгәндә әйтелә. *[Бабсаҡ — ханға:] Бер-бер йомош бармы әллә яңынан? — ти,— Уныһын да үтәрбеҙ беҙ, иҫән булһаҡ.* «Бабсаҡ менән Күсәк». **Иҫән бул(ығыҙ)!** хушлашҡанда әйтелә. *Бары ла әйелеп ҡалалар, хуш, иҫән бул, тиешеп.* Ш. Бабич. **Иҫәнме(һегеҙ)!** иҫәнләшкәндә әйтелә.— *Иҫәнме, Йылҡыбай менән Кейекбай! — тип ҡысҡырып үтә Кейеҙбай* (Әкиәттән).

● *Баш иҫән булһа, мал табылыр.* Әйтем.

**ИҪӘН-АМАН** *с.* **1.** Донъяла бар, тере; иҫән-һау. *Иҫән-аман булыу. Иҫән-аман йөрөү.*

**2.** Бәлә-ҡазаһыҙ, зыян-зарарһыҙ; теүәл. *Нәмәләр иҫән-аман.* ■ *[Аҡназар] һабан һөрөп, арыш сәсеп, быйыл шуны иҫән-аман тапатып алды.* Ғ. Дәүләтшин.

**ИҪӘНГЕРӘТЕЛЕҮ** *к. төш. ҡар.* **иҫәнгерәтеү.**

**ИҪӘНГЕРӘТЕҮ** *к.* **1.** Бәреп, һуғып, аңды томалау. *Әсәйемде барып ҡосаҡлағайным, мине бер яҡҡа иҫәнгерәтә һуғып тәгәрәттеләр.* Ф. Иҫәнғолов.

**2.** *эйһ. ф. ҡар.* **иҫәнгерәү.** *Иҫәнгерәтеп тора. Баш ауыртып, иҫәнгерәткән инде.*

**ИҪӘНГЕРӘҮ** *к.* **1.** Бәрелеү, һуғылыу һ. б. сәбәптәрҙән аң томаланыу, иҫ юйылыу. *Иҫәнгерәп ятыу.* ■ *Тау батыр ҡолағы йырылып килеп төшкән дә иҫәнгерәп оҙаҡ ҡына иҙәндә ятҡан, ти* (Әкиәттән).

**2.** Иҫ, аҡыл тарҡалыу, аң буталыу; аптыраныу. *Иҫәнгерәп ҡалыу. Иҫәнгерәп тороу. Иҫәнгерәп ултырыу.* ■ *[Сәрбиямал:] Атаһы, кәҙерле ҡунаҡты ҡаршы ал. Атаҡ-атаҡ, нишләп иҫәнгерәп тораһың?!* З. Биишева.

**ИҪӘНКЕҮ** *к. диал.* Иҫәнгерәү.

**ИҪӘНЛЕК** *и.* Имен-аман хәл; һаулыҡ, сәләмәтлек. *[Ғәмилә:] Шөкөр, иҫәнлек бар.* Б. Бикбай.

◆ **Иҫәнлек һорашыу** күрешеп, хәл белешеү. **Иҫәнлеккә** иҫән-һаулыҡ теләп әйткән һүҙ. *[Крәҫтиән:] Барын сығарҙым. Ашағыҙ. Иҫәнлеккә!* Д. Юлтый.

**ИҪӘНЛЕК-ҺАУЛЫҠ** *и. йыйн.* Һаулыҡ, сәләмәтлек. *Иҫәнлек-һаулыҡ һәйбәт булыу. Иҫәнлек-һаулыҡ булмау.* ■ *Ҡамыр батыр иҫәнлек-һаулыҡ һорашып, өйгә ингән* (Әкиәттән).

◆ **Иҫәнлеккә-һаулыҡҡа** ашағанда, эскәндә

яҡшы теләк теләп әйтелә. **Иҫәнлек-һаулыҡ һорашыу** күрешеп, хәл белешеү. *[Хәмит — Ғәмиләгә:] Иҫәнлек-һаулыҡмы, еңгә?* Б. Бикбай.

**ИҪӘНЛӘШЕҮ** *к.* Осрашҡанда иҫәнлек-һаулыҡ һорашыу; сәләм бирешеү. *Заман председателгә ҡул биреп иҫәнләште ..* Ә. Вәли. *Биктимер .. һораулыҙ-ниһеҙ инә лә: „Иҫәнме, һаумы?“ — тип иҫәнләшә* (Әкиәттән).

**ИҪӘН-ҺАУ** *с. йыйн.* **1.** Һау-сәләмәт; тере. *Иҫән-һау булыу.* ■ *Ул [Аҡбулат] үҙе иҫән-һау сакта барлы-юҡлы мөлкәтен уландарына бүлеп бирмәксе булған* (Әкиәттән). *[Атаһы:] Иҫән-һау йөрөп ҡайтыуыңа бик шатмын, улым* (Әкиәттән).

**2.** Бәлә-ҡазаһыҙ, зыян-зарарһыҙ, имен-аман. *[Тимербулат:] Теге ҡарун Ныязгол ҡулға эләкмәй йөрөй. .. Иҫән-һау ошо мылтыҡ ҡулымда ҡайтһамы, у, Юлия апай!* Һ. Дәүләтшина.

**ИҪЕП** *и.* **1.** Ниҙеңдер берәмекләп билдәләнгән һаны; хисап, миҡдар. *Мал иҫәбе. Иҫәбен алыу. Иҫәбен белеү.* ■ *[Атаһы — улына:] Балам, һин бик бай булырһың, алтыныңдың иҫәбенә сыға алмаҫһың* (Әкиәттән). **Ҡара иҫәп** көнделдән һанап сығарылған иҫәп. *Ҡара иҫәп буйынса. Ҡара иҫәп менән. Ҡара иҫәпкә шәп.* ■ *Миңә суртан ҡармағы кәрәк,— тинем. Шунда уҡ ҡара иҫәп менән нисә ҡармаҡ кәрәк булырын көнделдән иҫәпләп алдым.* С. Кулибай.

**2.** Күләмде берәмекләп билдәләү ғәмәле; хисап. *Иҫәпкә алыу. Иҫәптән яҙыу.* ■ *Илеңде алыр [хан] ҡулыңдан, тартып алыр малыңды, иҫәпкә алыр барыңды* (Ҡобайырҙан)./ Уйын, ярышта һәр яҡтың һөҙөмтәһен күрһәткән һан. *Иҫәпте башлау.* ■ *[Волейбол ярышы] 3 : 1 иҫәбе менән нефтселәр файҙаһына тамамланды.* «Совет Башҡортостаны», 1985, 22 май.

**3.** Эшләнгән эш өсөн түләү ғәмәле һәм түләнгән хаҡ. *Иҫәп сығарыу. Тулы иҫәп яһау.*/ Эштән киткәндә барланған һуңғы эш күләме һәм шуға тейешле хаҡ. *Иҫәп алып китеү.* ■ *Приказчик .. ике йоманан артыҡ инде Айбулатҡа иҫәп бирмәй һуҙып тик йөрөтә.* Һ. Дәүләтшина. **Иҫәп биреү** 1) хеҙмәт хаҡын түләп, эштән бушатыу, сығарыу; 2) эш, ҡылыҡ һ. б. өсөн яуап биреү. *Айбулат йәшлек ҡыҙыулығы менән был өмөттәргә ирешеү юлының ауыр, ҡатмарлы икәнлегенә иҫәп биреп бөтөрмәй әле.* М. Минһажетдинов.

**4.** Ниҙер эшләргә уйланған уй; ниәт. *Иҫәбе ҙур. Иҫәбе юҡ. Иҫәп тотоу.* ■ *[Бәкер:] Минең иҫәп тағы бер-ике көн кухня тирәһендә ҡунаҡ булыу ине.* А. Таһиров.

**5.** *кусм.* Кешеләр, иәмәләр, күренеш һ. б. ниндәйҙер бер сифаты менән бер-береһенә оҡшаш булған төркөмө; рәт. *Иҫәпкә инеү. Алдынғылар иҫәбендә йөрөү.* ■ *Уларҙың [йылҡыларҙың] өсәүһе бер баш малға тормаҫ. Шулай булғас, уларҙы мал иҫәбенә лә индерергә ярамай.* Ғ. Дәүләтшин.

**6.** *төб. клш.* **иҫәпкә,** *сығн. клш.* **иҫәптән** Кем йәки иәмәнең (ойошма һ. б.) аҡсаһына һ. б. мөмкинлегенә таянып. *Минең иҫәптән түлә. Дәүләт иҫәбенә төҙөү. Колхоз иҫәбенә уҡыу.*

♦ **Ике иҫәп — бер хисап** күпме һанаһаң да барыбер, үҙгәреш юҡ, тигән мәғәнәлә әйтелә. **Иҫәбе юҡ** һанап бөтөргөһөҙ, бик күп. *Малдың иҫәбе юҡ, ялан тултырып йөрөй.* **Иҫәпкә алыу** иғтибарға алыу, иғтибар итеү. *Шахта төбөнә төшөп еткәндә, ниндәйҙер шытырлаған тауыш ишетелһә лә, Күсәрбай ағай уны иҫәпкә алманы.* Т. Хәйбуллин. **Иҫәпкә бар, һанға юҡ** булдыҡһыҙ, эшке яраҡһыҙ кешегә ҡарата әйтелә. *Беҙҙең ауылдың клуб мөдире иҫәпкә бар, һанға юҡ. Аҙналар буйы клубҡа килеп тә урамай.* «Ағиҙел», 1984, № 1. **Иҫәпкә һан** кәрәк өсөн түгел, исем өсөн. *Иҫәпкә һан булыу. Иҫәпкә һан өсөн йөрөү.* ■ *Тары һуңғы йылдарҙа иҫәпкә һан ғына булды. Ҡайһы бригадаларҙа уны бөтөнләй оноттолар.* Р. Низамов. **Иҫәптән төшөү** 1) ниндәйҙәр ойошманың иҫәбенән сығыу; 2) иғтибарҙан сығыу. *Иҫәптән төшкән кеше.* **Иҫәпте өҙөү** мөнәсәбәтте бөтөрөү. **Хужалыҡ иҫәбе** *эк.* хужалыҡты үҙенән килгән файҙа менән тотоу ысулы. *Хужалыҡ иҫәбе индереү. Хужалыҡ иҫәбенә күсеү.* ■ *Хужалыҡ иҫәбенең төп принциптары: предприятиеның производствола тотҡан сығымдарҙы ҡайтарыуы һәм табыш алыуы, хужалыҡ үҙаллылығы, материаль ҡыҙыҡһындырыу һәм материаль яуаплылыҡ, предприятиеның эшенә һум менән контроллек итеү.* Х. Ҡадиров. **Шул иҫәптән** күрһәтелгәндәр араһында, шуның эсендә. *Ауыл хужалығының бөтә тармаҡтарын, шул иҫәптән малсылыҡты, үҫтереү буйынса бик ҙур эш эшләнде.* «Малсылыҡ нигеҙҙәре». **Юҡҡа иҫәп** юҡ менән бер. *Минең әсәй барын бар, тик юҡҡа иҫәп: кейәүгә сыҡҡан ..* С. Агиш.

● *Дуҫың дуҫ булһын, иҫәбең дөрөҫ булһын.* Мәҡәл. *Иҫәбе юҡтың малы теүәл.* Әйтем. *Мал табылыр, иҫәп кәрәк.* Әйтем. *Өйҙәге иҫәпте баҙарҙағы хаҡ боҙа.* Әйтем.

**ИҪӘПЛЕ** *с.* **1.** Иҫәпләнгән, һанаулы, хисаплы. *Иҫәпле аҡса.*

**2.** Сикләнгән, бик аҙ; һанаулы, ҡәҙерле. *Иҫәпле ғүмер. Иҫәпле көн.* ■ *Ураҡ ваҡытында һәр бер сәғәте иҫәпле.* М. Тажи.

● *Иҫәпле булһын алғаны, хәйерле булһын ҡалғаны.* Әйтем. *Иҫәпле дуҫ айырылмаҫ* (яҡшылыҡҡа яҡшылыҡ менән яуап бирә белгән кеше тураһында әйтелгән әйтем).

**ИҪӘПЛӘНЕҮ** *к.* **1.** *төш. ҡар.* **иҫәпләү.** *Иҫәпләнгән иген.*

**2.** Ниндәйҙер мөнәсәбәт, баһа менән билдәләнеү; ҡаралыу, һаналыу. *Яҙғы көндәге йофар тиреһе бик яҡшы иҫәпләнә.* К. Фәхретдинов.

**ИҪӘПЛӘТЕҮ** *к. йөкм. ҡар.* **иҫәпләү.** *Аҡса иҫәпләтеү.*

**ИҪӘПЛӘҮ** *к.* **1.** Ниҙеңдер һанын билдәләү; хисаплау, һанау. *Аҡса иҫәпләү. Шәлдең күҙен иҫәпләп бәйләү. Бармаҡ менән иҫәпләү. Дөрөҫ иҫәпләү. Көнделдән иҫәпләү. Яҙып иҫәпләү. Иҫәпләп биреү. Иҫәпләп ҡуйыу.* ■ *[Йәнтимер Салихҡа:] Иҫәпләп ҡара! Һин бит хәҙер ун алты йәштә, дүрт йылдан егерме йәштә булаһың.* С. Агиш. *[Ныязгол] көнделдән тиҙ генә иҫәпләп алды. «Бер йөҙ, ике йөҙ, өс йөҙ сыҡһын..* Һ. Дәүләтшина.

**2.** Һандарҙы бер-бер артлы атау; һанау, хисаплау. *Унға ҡәҙәр иҫәпләү.*

**3.** Һандар менән арифметик ғәмәлдәр сыға-

рыу. *Ятка иҫәпләү. Иҫәпләп белеү. Иҫәпләп сығарыу.* ■ *Яттан иҫәпләү тормош практикаһында киң кулланыла. Ул .. уҡыусыларҙың зирәклеген үҫтерә, шуның менән бергә яҙма иҫәпләүҙә еңеләйтә.* „Башҡортостан уҡытыусыһы“, 1985, № 1.

**4.** *күсм.* Ниҙер иҫәбенә ҡуйыу, үҙеңсә шулай тип ҡабул итеү; һанау, нимәлер тураһында билдәле фекереӊ, баһаң булыу. *Дуҫ итеп иҫәпләү. Үҙеңде бәхетле иҫәпләү. Яҡшы кеше тип иҫәпләү. Үҙ бурысың тип иҫәпләү. Үҙеңде хаҡлы тип иҫәпләү.* ■ *Йәнтимер мине үҙенән ике тапҡыр кесерәк иҫәпләй. Ҡайһы ваҡыт һорағанға ла яуап бирмәй.* С. Агиш. *[Әбей менән бабай] барын барға иҫәпләп, юғын юҡҡа иҫәпләп йәшәй биргән, ти* (Әкиәттән).

**5.** *күсм.* Нимәнелер күҙҙә тотоу, иғтибарға алыу. *Балаларҙы иҫәпләмәгәндә, беҙ дүрт кеше.* ■ *[Айбулат:] — Өлкән еңгә, улай итеп, тамаҡ хаҡын хаҡҡа иҫәпләгән саҡта, нисәмә йылдар эшләүгә әллә ҡасан хаҡы сыҡҡандыр инде. Икәүләшеп эшләйбеҙ бит.* Һ. Дәүләтшина.

**ИҪӘПЛӘШЕҮ** *к.* **1.** *урт. яҙ амл. ҡар.* **иҫәпләү** 1. *Аҡса иҫәпләшеү.*

**2.** Тейешле хаҡты алышып-бирешеү, үҙ-ара иҫәп-хисап итешеү. *Иренең кешеләргә биргән кәңәше, күрһәткән ярҙамы өсөн дә ул [Ғәмилә] бик оҫта иҫәпләшә белә.* Б. Бикбай.

**3.** *күсм.* Үс алыу. *[Байрамғол:] Һуңлағанмын! Минең иҫәпләшә торған кешеләрем ошонда ине. .. Минән ҡасып ҡотола алмаҫһығыҙ.* Р. Ниғмәти. *[Григорий:] Үҙегеҙҙең ҡан дошманығыҙ булған баярҙар менән иҫәпләшергә ваҡыт.* Һ. Дәүләтшина.

**4.** *күсм.* Иғтибарға, һанға алыу. *[Ҡотлояр] хеҙмәтсәндәрҙең арыуы, йонсоуы менән иҫәпләшеп тормай ул.* Д. Юлтый.

**ИҪӘПСЕ** *и.* Иҫәп-хисап эшен алып барыусы.

**ИҪӘПСЕЛ** *с.* **1.** Кешегә ҡылған һәр яҡшылығын, һәр бәләкәй генә эшен дә иҫәпкә алып барған; ваҡсыл.

**2.** *диал.* **һ**аҡсыл.

**ИҪӘП-ХИСАП** *и. йыйн.* **1.** Иҫәпләү, һанау эше; иҫәп һәм хисап. *[Януҙаҡ:] Мин ана шул иҫәп-хисап эштәре хаҡында әйтеп үтмәк булам.* М. Тажи.

**2.** Төрлө хәлде һәр яҡлап уйлап, самалап сығарылған ниәт. *Кеше менән кәңәшләшмәй, иҫәп-хисапһыҙ ғына эш бармай бит ул.* Ф. Мөхәмәтйәнов.

♦ **Иҫәбе-хисабы юҡ** *йәки* **иҫәбе лә, хисабы ла юҡ** һанына сығырлыҡ түгел; бик күп.

**ИҪӘП-ҺАН** *и.* Берәмекләп иҫәпләнгән миҡдар; иҫәп һәм һан. *Иҫәбе-һанына сығып булмай.* ■ *Әсәй мәрхүм, ҡайһы саҡта беҙҙең иҫәп-һанды ла онота .. торғайны.* М. Тажи.

♦ **Иҫәбе-һаны юҡ** һанап бөтөрлөк түгел; бик күп. *Майҙандағы кешенең иҫәбе-һаны юҡ.*

**ИҪӘПҺЕҘ** *с.* **1.** Иҫәп менән эш итмәгән, иҫәпләп, һанап тороуҙы белмәгән. *Иҫәпһеҙ кеше. Иҫәпһеҙ хужа. Иҫәпһеҙ булыу.*

**2.** *күсм.* Күп һанда, һанап бөткөһөҙ. *Иҫәпһеҙ күп.* ■ *Күк йөҙө саф, иҫәпһеҙ йондоҙҙар һибелгән.* Д. Юлтый.

● *Иҫәпһеҙҙең ҡуйы теүәл.* Әйтем. *Иҫәпһеҙҙән тоҙ алма, иҫәүәндән ҡыҙ алма.* Әйтем.

**ИҪӘПҺЕҘ-ХИСАПҺЫҘ** *с. ҡар.* **иҫәпһеҙ-һанһыҙ.**

**ИҪӘПҺЕҘ-ҺАНҺЫҘ** *с. йыйн.* Иҫәбе булмаған, күп. *Юл буйлап иҫәпһеҙ-һанһыҙ .. машина, танк, миномет ҡалдыҡтары ағыла ине.* С. Кулибай.

**ИҪӘР** *с.* **1.** Аҡыл һәләте самалы, аҡылға зәғиф; ахмаҡ, йүләр, алйот, тинтәк. *Иҫәр кеше. Иҫәр булыу.* ■ *Яраҡтан кеше иҫәр менән бер бит ул: йән һөйгәне янында булһа, бер нәмә кәрәкмәй, диңгеҙ һыуы тубыҡтан.* Б. Бикбай.

**2.** Еңел уйланған, аҡылһыҙ. *Ниндәйҙер иҫәр уй килде миңә.* С. Агиш. / Әрләп, шелтәләп әйтелгән һүҙ.— *Сеү! Хаин булырһың, ант итмә, иҫәр!* Ш. Бабич.

● *Иҫәр ҡыҙығыр матурға, аҡыллы — батырға.* Мәҡәл.

**ИҪӘРЛЕК** *и.* Аҡылһыҙлыҡ, йүләрлек, ахмаҡлыҡ. *Йәшлек иҫәрлеге.* ■ *Әллә йәшлек, әллә иҫәрлек, йәш ғүмерҙең үткәнен һиҙмәнек* (Халыҡ йырынан).

**ИҪӘРЛӘНЕҮ** *к.* **1.** Аҡылдан яҙыу, аҡылға еңеләйеү. *Иҫәрләнеп ҡалыу.*

**2.** Аҡылһыҙ кеше һымаҡ ҡыланыу; уйламай, еңел аҡыл менән эш итеү. *Һин мишәрләнмә, иҫәрләнмә, Шәриф, имлә боҙоп. Боп-боҙоҡ имләң менән һин пылт итәһең пыр туҙып!* Ш. Бабич.

**ИҪӘҮӘН** *с.* **1.** Аҡылға зәғиферәк, аҡылы теүәл түгел; алйот, йүләр. *[Хан] аяҡ аҫтында буталып йөрөгән иҫәүән улы Алтанды тортоп ебәрҙе, ти* (Әкиәттән).

**2.** Уйламай, еңел эш итеүсән.— *Уйлап ҡара: баш та, батша ла юҡ, ә халыҡ бит беҙҙең иҫәүән.* Х. Ҡунаҡбай. / Шелтәләп әйтелгән һүҙ.— *Шатлыҡҡа илайҙарҙыр шул, иҫәүән!* З. Биишева.

**ИҪӘҮӘНЛЕК** *и.* Ахмаҡлыҡ, иҫәрлек. *Иҫәүәнлек күрһәтеү.*

**ИҪӘҮӘНЛӘНЕҮ** *к.* **1.** Иҫәүәнгә, аҡылһыҙға әйләнеү. *[Наилә:] Хәсрәтемдән иҫәүәнләнеп, янымдағы аҡсамды алдырҙым. Бер ҡайҙа ла барыр рәтем юҡ.* Ғ. Ибраһимов.

**2.** Уйламай эш итеү, еңел аҡылланыу. *Иҫәүәнләнеп йөрөү.*

**3.** *һөйл.* Аптыраныу. *[Ҡара ҡортҡа:] .. Йә, ирҙәр, иҫәүәнләнеп ни ҡарап тораһығыҙ, әллә ҡайҙа ҡасып өлгөрмәгәндер, барығыҙ, табығыҙ.* И. Ғиззәтуллин.

**ИТ** *и.* **1.** Мал, төрлө йәнлек йәки ҡош-ҡорттоң ашау өсөн тәғәйенләп һуйылған түшкәһе йәки шул түшкәнең берәй киҫәге. *Айыу ите. Йылҡы ите. Ҡаҙ ите. Һыйыр ите. Һимеҙ ит. Ябыҡ ит. Һум ит. Ҡаҡлаған ит. Ит комбинаты. Ит һатыусы. Ит турау. Ит өләшеү.* ■ *Фәйзрахман ағай итте өләшеп ултыртты. .. Тоҙлоклап ит һоғондорошторолар.* Н. Мусин. **Йылы ит** яңы һуйған ит. **Йәш ит** 1) йәш малдың ите; 2) *ҡар.* **йылы ит. Күк ит** 1) ит менән тире араһындағы яры ҡатыш күк ҡатлам; тире аҫты ите; 2) күм-күк ябыҡ ит. **Ҡара ит** майһыҙ ҡалын ит. **Ҡарт ит** оло малдың ите.

**2.** *һөйл.* Ҡош-ҡорт, хайуан һәм кеше тәненең

һөйәк менән тире араһындағы йомшаҡ өлөшө; тәндәге мускулдар. *Беләктең итен ҡатырыу. Пуля һөйәккә теймәй итенә тейгән.*

**3.** Емеш-йәшелсәнең йомшаҡ өлөшө. *Сейәнең ите.*

♦ **Бауыр ите** *ҡар.* **бауыр. Ит бүкәне** *мыҫҡ.* эш, хәрәкәт яратмаған, күберәк ултырырға яратҡан тулы кәүҙәле кешегә ҡарата әйтелә. **Ите һиңә, һөйәге миңә** борон баланы уҡытырға, эш өйрәтергә биргәндә хәлфәгә, оҫтаға әйтелгән һүҙ. **Ит ҡабы** *диал.* кейәү күстәнәсе. **Ит ҡуныу** һимереү, көрәйеү. *[Аҡназар ҙа], минең кеүек, бер ҙә тәненә ит ҡунмай торған ҡаҡса ғына бер .. ҡарт.* Ҡ. Даян. **Ит төшөү** ҡартайып йәки ауырып ныҡ ябығыу, ҡоро һөйәккә ҡалыу. **Ит туған** *диал.* бер туған. **Ит ултырыу** *ҡар.* **ит ҡуныу. Ит үреү** яңы ит үҫеү (яраға ҡарата); уңалыу. **Йөрәк итен телгеләү** *ҡар.* **йөрәк. Ҡолаҡ итен ашау** (*йәки* **сәйнәү**) *ҡар.* **ҡолаҡ. Теш ите** *ҡар.* **теш** [1] 1.

● *Ите — иткә, һурпаһы — биткә.* Мәҡәл.

**ИТАҠА** *и. диал.* Ҙур, ҡалын калуш.

**ИТАЛЬЯН** *и.* Италияның төп халҡын тәшкил иткән милләт һәм шул милләттең бер кешеһе. *Итальян халҡы. Итальян ҡатыны. Итальян теле.*

**ИТАЛЬЯНСА** *р.* **1.** Итальян телендә. *Итальянса һөйләү. Итальянса йырлау.*

**2.** Итальяндарға хас. *Макаронды итальянса бешереү.*

**ИТ-АШЛЫ** *с. һөйл.* Тулы кәүҙәле. *Ит-ашлы кеше. Ит-ашлы булыу.*

**ИТ-АШҺЫҘ** *с. диал.* Ябыҡ, ҡаҡса. *Кәүҙәгә ит-ашһыҙ.*

**ИТЕК** *и.* Оҙон ҡуныслы, ҡаты үксәле күн аяҡ кейеме. *Дағалы итек. Кирза итек. Күн итек. Резина итек. Хром итек. Итек башы. Итек ҡуныcы. Итек тегеү. Итек таҙартыу.* ■ *Ҡуҙлау-ай ҙа итек, ай еҙ даға, баҫҡан ғына һайын ҡом туҙа* (Халыҡ йырынан). *Аяғына кейгән итегенең ике ҡатлы икән олтаны* (Халыҡ йырынан). **Итек ҡолағы** тартып кейеү өсөн итек ҡунысының ике яғына тағылған элмәк. **Һаба итек** ат тиреһенән йөнлө яғын тышҡа ҡалдырып теккән итек.

♦ **Итек башындай** *ҡар.* **баш. Кейеҙ итек** *диал.* быйма.

**ИТЕКСЕ** *и.* Күн аяҡ кейемдәре тегеүсе һәм төҙәтеүсе оҫта. *Итексенең .. үткән-сүткәндең итеген ямап, табан һалып, үксә һуғып тапҡан аҡсаһы [ашауына] сак-сак етә икән, ти* (Әкиәттән).

**ИТЕК-СИТЕК** *и. йыйн.* Оҙон ҡуныслы күн аяҡ кейемдәре. *Закир иҫке итек-ситек, төпһөҙ салбар, һыңар еңе өҙөлгән тире тун .. тотҡан.* З. Биишева.

**ИТЕЛЕНЕҮ** *ҡ. ҡайт. ҡар.* **ителеү.** *Иглан ителенеү. Исраф ителенеү. Шулай гәҙәт ителенгән.*

**ИТЕЛЕҮ** *ҡ. төш. ҡар.* **итеү** 1, 2, 4, 5, 7. *Иглан ителеү. Ижад ителеү. Исраф ителеү. Конфисковать ителеү. Ҡабул ителеү. Ҡол ителеү. Мыҫҡыл ителеү. Тәржемә ителеү. Юҡ ителеү.* ■ *Беҙҙең формировать ителгән батальонды, ни өсөндөр, фронтҡа тура ебәрмәнеләр.* Д. Юлтый. *Хәҙер колхоздың тәьмин ителеүе йылдан-йылға үҫә.* Ғ. Ишбулатов. *Ҡуҙғал, уян ләғнәт ителгән ҡолдар һәм астар донъяһы!* Х. Ҡунаҡбай.

**ИТЕЛЬМӘН** *и.* Камчатканың төп халҡы һәм шул халыҡтың бер кешеһе (палеоазиат телдәренең береһендә һөйләшә). *Ительмән халҡы. Ительмән ҡатыны. Ительмән теле.*

**ИТЕНЕҮ** *ҡ. ҡайт. ҡар.* **итеү** 4, 5, 6. *Ғәҙәт итенеү. Исраф итенеү.* ■ *[Асия] үҙе тыңлай, үҙе мине һынаған кеүек итенә.* Н. Иҙелбай. *Наилә лә миңә ҡушылып һыҙланған төҫлө итенде, минең һыҙланыуы уға ла күсә ине.* С. Агиш. *Сәғиҙә .. мәктәпкә шаҡ-шоҡ итенгән тауыш ишеткәс, унда инеп сығырға булды.* М. Тажи.

**ИТЕҮ** *ҡ.* **1.** Исем, сифат, рәүеш һ. б. һүҙ төркөмдәре менән килеп, ҡушма ҡылым яһай һәм шул һүҙҙәрҙән аңлашылған мәғәнәгә ярашлы берәй эш башҡарыу, булдырыу, ниҙер яһау, ҡылыу, эшләү, үтәү һ. б. мәғәнәһен бирә. *Бик күп итеү. Бик шәп итеү. Донъяны баҡса итеү. Иректә итеү. Йыуып таҙа итеү. Ҡара итеү. Нисек итәйек?* ■ *Һине шундай итеп һөйҙөм: Артыҡ күрҙем үҙемдән.* М. Хәй. *Абдрахманды нисек тә тереләй әсир итмәксе булған аҡтар.* Ә. Вахитов. *Аҫыл да аҫыл ҡыҙҙарҙы ҡол итеп, ситкә ҡыуҙылар.* Салауат Юлаев. **Һүҙҙе һүҙ итеү** уйлаған, ниәтләнгән нәмәне үҙеңсә эшләү. *[Сәлимә] һүҙен һүҙ итте, «минең улым бик зирәк, уҡыһын», тине.* Һ. Дәүләтшина. / Нимәгәлер һанап, иҫәпләп ҡулланыу, тотоноу, йөрөтөү. *Иҫтәлек итеп тотоу. Сер итеп һаҡлау. Шуны хәбәр итеп һөйләү. Алабутаны икмәк итеп ашау.* ■ *Тимерғәле .. Заһит кейәүе ата туны итеп һыйлаған ҡыҙыл сапанын кейгән.* Һ. Дәүләтшина. *Үҙеңә йомаҡ әйтәйем, тапһаң, улым итәйем, тапмаһаң, ҡолом итәйем* (Ҡобайырҙан).

**2.** *-п* формаһында ярҙамлыҡ ҡылым сифатында теге йәки был кешегә ниндәйҙер вазифа йөкмәтеү, берәй эшкә билдәләү, тәғәйенләү мәғәнәһен аңлата. *Ағза итеп алыу. Бүлек мөдире итеп ҡуйыу. Директор итеү. Килен итеү. Уҡытыусы итеп билдәләү.* ■ *Тимер Янһаровты ауыл советы председателе урынбаҫары итеп раҫланылар.* Б. Бикбай. *[Өйҙөң] ул яғы һалҡын, вакытлыса МТФ кладовойы итеп тотола, кеше тормай.* Б. Бикбай.

**3.** Ярҙамлыҡ ҡылым сифатында ымлыҡ, оҡшатыу һүҙҙәре менән килеп, шунан аңлашылған эш-хәрәкәтте, тауышты һ. б. белдерә. *Ах итеү. Аһ итеү. Дөр итеү. Дырр итеү. Сут-сут итеп һайрау. Хыр-хыр итеү. Шабыр-шобор итеү. Шап итеү.* ■ *Уның күҙе тыуғанда уҡ һөрмәләнгән, керпектәре йым-йым итә һөрмәһеҙ ҙә.* Ш. Бабич. *Бәү-бәү итсе, кәҙерлем, күҙҙәреңде йом, гөлөм.* Ғ. Мәсғүт.

**4.** *-п* формаһында ярҙамлыҡ ҡылым сифатында сифат, рәүеш менән килеп, берәй эш-хәлдең нисек, ниндәй рәүештә башҡарылыуын аңлата. *Ал да гөл итеп. Арлы-бирле итеп. Асыҡ итеп. Еңел итеп. Йүнле итеп. Матур итеп. Насар итеп. Серле итеп. Төҫһөҙ итеп. Тәмле итеп. Һәйбәт итеп. Яҡшы итеп. Күп итеп ашау. Күп итеп йоҡлау.* ■ *Һөйләп бөткәс, ауыр итеп,*

*тәрән һулыш алды командир.* Р. Ниғмәти. *Инде ҙур маҡсаттары шул: йорт яһау бик яҡты итеп, яҡты йортта гөж килеп, уйнап йәшәү бик яҡшы итеп.* Ш. Бабич.

**5.** Ярҙамлыҡ ҡылым сифатында *-ырға* формаһындағы ҡылым менән килеп, ниәт, маҡсатты белдерә. *Ашарға итеү. Барырға итеү. Иларға итеү. Китергә итеү.* ■ *Шул ваҡыт әллә ниндәй ҡатын булмәгә инеп, сәңгелдәктәге баланы алып китергә генә иткәндә, эт уға ташланып баланы айырып алып ҡалған* (Әкиәттән).

**6.** Ярҙамлыҡ ҡылым сифатында күберәк ғәрәп-фарсы һүҙҙәре менән килеп, төп һүҙ аңлатҡан мәғәнә менән ҡушма ҡылым яһай. *Дауа итеү. Дәғүә итеү. Идара итеү. Ижад итеү. Мәжбүр итеү. Мәсхәрә итеү. Өмөт итеү. Фаш итеү. Хеҙмәт итеү. Хур итеү. Хәбәр итеү. Ял итеү.* ■ *Саф выжданым менән бөгөнгө көн хаҡ һүҙ биреп ҡыҙыл ант итәм.* Т. Йәнәби. *Ә һөнәрсе ғәҙәтенсә, алды-ялды белмәй, эшләүен дауам итә.* З. Биишева.

**7.** *һөйл.* Ярҙамлыҡ ҡылым сифатында рус теленән ингән һүҙҙәр менән килеп, ҡушма ҡылым яһай. *Буксовать итеү. Дежур итеү. Командовать итеү. Конфисковать итеү. Мобилизовать итеү. Танцевать итеү.* ■ *[Фатиха] бер төндө ошолай бөгөнгөләй дежур итте.* Р. Ғабдрахманов.

**8.** *һөйл.* Тәбиғи йомошто үтәү. *Бала аҫтына иткән.*

♦ **Ауыҙ итеү** ашап ҡарау, тәмләү. **Бар иткере** яҡшы теләк теләгәндә әйтелә. **Бер итеп** бик шәп, һәйбәт, ерена еткереп. *Бер итеп эҙләү.* **Серем итеү** әҙ генә йоҡлап алыу. **Үҙ итеү** ныҡ яҡын һанау. *Үҙ итеп күреү.* ■ .. *Кешеләр, яратығыҙ минең бәләкәсемде, рәнйетмәгеҙ.* .. *Күк йөҙөндә тулған Ай, һеҙ ҙә уны үҙ итегеҙ!* Ә. Хәмәтдинова. **Юҡ иткере** ҡарғағанда, насар теләк теләгәндә әйтелә.

● *Асыуыңды ат ит, аҡылыңды теҙген ит.* Мәҡәл. *Балта сапҡансы түмәр ял итә.* Әйтем. *Барлыҡ бар иткән, юҡлыҡ тар иткән.* Мәҡәл. *Илсе итеп эт ебәрһәң, илеңә яу килтерер.* Мәҡәл. *Кеше аҡылын ишет, үҙ аҡылың менән эш ит.* Мәҡәл. *Ҡатынды кеше иткән егет, арбаны яҡшы иткән дегет.* Әйтем. *Ҡыу тирәк талға һөйкәлгән, ҡырҡ йыл ғүмер иткән.* Мәҡәл. *Этте түрә итһәң — эттәр ҡәҙере күтәрелә.* Әйтем. *Ямандан яҡшы тыуыр — әҙәм итеп танығыҙ.* Әйтем. *Яманды бағауыл итһәң, «яу килә» тип ҡысҡырыр.* Әйтем.

**ИТЕШЕҮ** *ҡ. урт. ҡар.* **итеү** 1—4, 7. *Сауҙа итешеү. Ярҙам итешеү.*

**ИТЛАҠ** [*ғәр.*] *и. иҫк. кит.* Кемдеңдер ҡотҡарылыуы, азатлығы. *Дамелла .. тәхрирәт һәм итлаҡта нурлы замир.* Аҡмулла.

**ИТЛЕ** *с.* **1.** Ит менән бешерелгән, иттән әҙерләнгән. *Итле бәлеш. Итле һурпа.* ■ *Күршеләге иркен тормошло кешеләр, күп ваҡытта итле аш бешерәләр.* М. Ғафури.

**2.** Һимеҙ, йыуан кешенең аяҡ-ҡулы һ. б. ҡарата әйтелә. *Итле балтыр.* ■ *Бер һүҙ әйтмәҫтән,.. Ғүмәрҙең тығыҙ, итле елкәһенә һуҡты.* С. Агиш.

**3.** Йомшаҡ өлөшө ҙур, һәйбәт булған (сейә һ. б. емештәргә ҡарата). *Итле сейә.*

**ИТЛӘС** *с.* Ҡалын итле, йыуан, һимеҙ. *Итләс битле.* ■ *Ул [Нәсебәт] сөгөлдөр һымаҡ ҡыҙарынып, тирләгән итләс маңлайын күлъяулығы менән һөрттө.* Д. Бүләков.

**ИТЛӘҪ** *с. ҡар.* **итләс.**

**ИТЛӘҮ** [1] *ҡ.* **1.** Күнде, тирене үтә сәнсмәй, эске ит ҡатламынан әләктереп тегеү. *Ситек табанын итләү. Итләү беҙе.*

**2.** Күн аяҡ кейеме теккәндә йөй араһына нәҙек күн ҡыҫтырып тегеү.

♦ **Ҡайыш итләү** *ҡар.* **ҡайын.**

**ИТЛӘҮ** [2] *и.* Эшкәртелгән күндең, тиренең эс яғындағы йоҡа ғына йомшаҡ ҡатламы.

**ИТСЕ** *и.* **1.** Ит һатыусы. *Итсе Муса тана һуйған, имеш, ҡаҙағын һигеҙ тиндән һата, имеш, тип һөйләнеләр.* Һ. Дәүләтшина.

**2.** Ит сабыусы.

**ИТТЕРЕҮ** *ҡ. йөкм. ҡар.* **итеү** 1—5, 7, 8. *Ярҙам иттереү.* ■ *Сурагол бисәһе менән бик оҙаҡ иттереп сәй эсеп алдылар.* Т. Хәйбуллин. *Бабай уҡытыусының һүҙенә яуап иттерепме, малай менән һөйләшепме, мыйыҡ аҫтынан нимәләр әйтте..* Й. Мостафин. .. *Һалдат ҡапсығын йәлп иттереп һалып, ҡыу әрем өҫтөнә ултырҙы.* Ф. Исәнғолов. *Зәйнәп Сәйҙел менән бергә торор һәм уҡыуын дауам иттерер... Шулай ҡорҙо улар алғы көндө..* Ғ. Сәләм.

**ИТТИЛАҒ** [*ғәр.*] *и. иҫк. кит.* Кемдең ниҙелер аңлауы, белеүе.

□ **Иттилағ итеү** (*йәки* **ҡылыу**) аңлау, белеү. *Яусы — һуғышсы мәғәнәһендә булып, кәдимдә башҡорттарҙа ҡыҙҙы көсләп, һуғышып алыу ғәҙәте булдығынан, хәҙерҙә лә ҡыҙ һораусы иттилағ ҡылына.* С. Яҡшығолов.

**ИТТИФАҠ** [*ғәр.*] *и. иҫк.* Берҙәмлек, берләшмә, ойошма. *Барсабыҙ бер иттифаҡта булып, һалдыҡ мәзкүр яһаҡтарыбыҙҙы Ҡазан кәлгәһенә.* «Башҡорт шәжәрәләре», 1960. *Йорт иттифаҡҡа килде.* М. Ҡулаев. **Мосолмандар иттифаҡы** *тар.* татар буржуаз милләтселәре тарафынан 1905 йылда төҙөлгән паитюркистик һәм панисламистик ойошма. *[Айбулат — Ҡәүи мәгзүмгә:] Эшсенең теләге хужаның теләгенә ҡапма-ҡаршы була. .. һеҙ тәкдим иткән «Мосолмандар иттифаҡы» тигән бер генә фиркәгә бөтә мосолмандар инә алмай.* Һ. Дәүләтшина.

**ИТТИФАҠАН** [*ғәр.*] *р. иҫк. кит.* **1.** Берҙәм рәүештә, бергәләшеп.

**2.** Осраҡлы рәүештә.

**ИТТИФАҠИ** [*ғәр.*] *с. иҫк. кит.* Уйламаған, көтөлмәгән, осраҡлы. *[Уның менән] беренсе танышыуым гәйәт иттифаҡи бәхеттән генә килеп сыҡты.* М. Ғафури. *Юғалған кағыҙҙар дәфтәрем араһынан иттифаҡи рәүештә табылды.*

**ИТТИФАҠЛАШЫУ** *ҡ. иҫк.* Ойошоу, берләшеү. *[Бер кеше:] Ни булһа ла булһын, ысынлап та картлар, иттифаҡлашып ҡарарға кәрәк.* Д. Юлтый.

**ИТТИФАҠСЫ** *и. тар.* «Мосолмандар иттифаҡы» (*ҡар.* **иттифаҡ**) ойошмаһында ағза булып торған кеше. *Иттифаҡсылар халыҡты алдауға ҡоролған беренсе думаны ҡотлап батшаға хәбәр ебәрҙеләр.* Ғ. Рамазанов.

**ИТТИХАД** [*ғәр.*] *и. иҫк. кит.* Бер фекерҙә булып эш иткән төркөм. *Төрлө яҡҡа сәселгән*

*мосолманды таламакта аурупалар иттихадта.* М. Ғафури.

**ИТТИХАЗ** [*ғәр.*] *и. иҫк. кит.* Кемдең ниҙелер ҡабул итеүе, алыуы.

□ **Иттихаз итеү** ҡабул итеү, алыу.

**ИТТИҺАД** [*ғәр.*] *и. иҫк. кит.* Берҙәмлек. *Мәғнәүи дуҫҡа мәкамда иттиһад мәшрут имәс.* Аҡмулла.

**ИТӘҒӘ** [*ғәр.*] *и. кар.* **итәғәт.**

**ИТӘҒӘТ** [*ғәр.*] *и.* Тыңлаусанлыҡ, күндәмлек. // *Итәғәтһеҙ кеше.* ■ *Хованоский башҡорттарҙы итәғәткә өндәү өсөн Ҡазандан бер нисә иғтибарлы мосолманды күндерҙе, ләкин башҡорттар итәғәткә килмәнеләр.* М. Һаҙиев.

□ **Итәғәт итеү** (*йәки* **ҡылыу, күрһәтеү**) 1) һүҙ тыңлау, күндәм булыу, буйһоноу. *[Ярғанат:] Эй хоҙайым, бер нәмәне бул, тип әйтһәң, һис туктауһыҙ һәр бер нәмә ҡыла итәғәт!* М. Ғафури; 2) изгелек, яҡшылыҡ итеү. *Мин үҙем әҙәп, үҙем нәзәкәт, донъя үҙемә итһен итәғәт.* Ш. Бабич.

**ИТӘҒӘТЛЕ** *с.* Тыңлаулы, күндәм. *Итәғәтле кеше. Итәғәтле булыу.* ■ *Хисбулла әсәһен дә бер һүҙһеҙ тыңлай, мулланың да күңеленә ярай белде. [Ул] иң инсафлы, иң итәғәтле шәкерт булды.* З. Биишева. *Итәғәтле, миһырбанлы инең, ҡапыл ҡырыҫайҙың ниңәлер.* А. Игебаев.

**ИТӘК** *и.* **1.** Өҫ кейеменең билдән түбәнге өлөшө. *Бөрмә итәк. Киң итәк. Тар итәк. Итәк салғыйы.* ■ *Күлдәгемдең итәктәре ергә етмәй бер ҡарыш* (Халыҡ йырынан).

**2.** *һөйл.* Ултырған кешенең тубыҡ өҫтө, алды. *Итәккә ултырыу.* ■ *Алма бер әфисәрҙең итәгенә барып төштө* (Әкиәттән).

**3.** Ҡатын-ҡыҙ күлдәгенең осона ҡатлап тегелгән тар өлөшө; мәскәү, ҡатмар. *Өс итәк. Итәк һалыу. Итәк тотоу.* ■ *Ул [Бибеш] күп итәк һалып тегелгән өр яңы күк сатин күлдәк бирҙе.* З. Биишева. *Бик һылыу һылыу була һырғаһыҙ ҙа, ебәк күлдәк, ҡырҡ итәк, бөрмәһеҙ ҙә.* Ш. Бабич. **Бала итәк** итәк осона тар буй итеп тегелгән өлөш. *Күлдәккә бала итәк тегеү.* ■ *Өйҙән йәш кенә ҡыҙмы, ҡатынмы сыҡты. Ул бала итәкле күлдәк кейгән.* Н. Мусин. **Гармун итәк** *һөйл.* гармун күреге һымаҡ, бөрөп-бөрөп тегелгән итәк. *Гармун итәкле күлдәк.* **Ҙур итәк** итәк осона киң итеп һалынған ҡатмар (әбейҙәр күлдәгенә хас).

**4.** Тауҙың, түбәнең күтәрелә башлаған иң аҫҡы өлөшө. *Тау итәге.* ■ *Биттәреңдә, Урал тау, ҡамыштай ҡарағай урманың. Итәгеңдә, Урал тау, балаҫтай болон, ҡырҙарың.* Салауат Юлаев.

♦ **Итәккә йәбешеп** (*йәки* **тағылып**) **йөрөү** бер аҙым ҡалмай эйәреп йөрөү. **Итәк аҫтынан** йәшерен (бер эш ҡылыу). *Ғайнанов итәк аҫтынан араҡы һата, спекуляция менән шөғөлләнә.* А. Карнай. **Итәк ҡырҡып, ең ялғау** етмәгәнде еткерергә тарышыу тураһында әйтелә. **Итәк кере** *диал.* ҡатын-ҡыҙҙың айлығы. **Итәк тултырып** күп итеп. *Алла һиңә бәхетте күрәп-күрәп, итәк тултырып биргән.* Т. Хәйбуллин. **Итәк тулы** бик күп (балаларға ҡарата әйтелә). *Итәк тулы йәтимең, илап ҡалған ҡатының.* М. Буранғолов.

● *Иркә бала итәк бысрата.* Әйтем. *Яу яғанан алғанда, эт итәктән алыр.* Мәҡәл.

**ИТӘК-ЕҢ** *и. йыйн.* Кейемдең итәк һәм еңдәре.

♦ **Итәк-еңде йыйыу** 1) бөхтә, ыҫпай булыу; 2) *күсм.* абайлы булыу, һаҡ булыу. *Ауыҙы бешкән халыҡ алдын-артын ҡарай, итәк-еңен йыйыу хәстәрен күрә.* Ф. Иҫәнғолов.

● *Эт этлегеннән итә: итәк-еңде йырта.* Мәҡәл.

**ИТӘКЛЕ** *с.* Итәк (3 мәғ.) ҡуйылған. *Өс итәкле күлдәк.* ■ *Хаят .. ҡаласа тегелгән әллә нисә итәкле батист күлдәге менән елтелдәп йүгереп [килеп инде].* Һ. Дәүләтшина.

**ИТӘКЛӘҮ**[1] *ҡ.* Ҡатмар һалыу, ҡатмарлау. *Ҡыҙҙарға итәкләп теккән күлдәк бик тә килешә.*

**ИТӘКЛӘҮ**[2] *ҡ.* **1.** Итәккә һалыу, итәккә тултырыу. *Уткән көҙ итәкләп алып ҡайтырлыҡ та иген үҫмәне.* Һ. Дәүләтшина.

**2.** Итәк буйлау, тау итәге буйлау. *Зәңгәр шаршау ҡороп, тау итәкләп, ҡояш боҫто.* Ғ. Амантай.

**ИТӘК-САБЫУ** *и. йыйн.* Өҫ кейеменең билдән түбәнге өлөштәре.

**ИТӘК-САЛҒЫЙ** *и. йыйн.* Оҙон итәкле өҫ кейеменең билдән түбәнге өлөштәре. *Тыңҡыш Айса .. бүректәрен ҡырын кейеп, итәк-салғыйҙарын һөйрәлдереп,.. Тәржемән тыҡрығына ҡарай төшөп китте.* Т. Хәйбуллин.

**ИТӘН** *с. диал.* Итләс.

**ИФА** [*ғәр.*] *и. иҫк. кит.* Ниҙеңдер башҡарылышы, үтәлеше.

□ **Ифа итеү** үтәү, еренә еткереү, башҡарыу. *Нисек булһа ла вәғәҙәне ифа итер өсөн аҡса рәтләп ҡуйҙым.* М. Ғафури.

**ИФАДӘ** [*ғәр.*] *и. иҫк. кит.* Белдереү, хәбәр.

□ **Ифадә итеү** (*йәки* **ҡылыу**) аңлатып биреү, хәбәр итеү.

**ИФЛАС** [*ғәр.*] *и. иҫк. кит.* Бөлгөнлөк.

□ **Ифлас итеү** бөлгөнлөккә төшөү.

**ИФРАД** [*ғәр.*] *и. иҫк. кит.* **1.** Яңғыҙлыҡ.

**2.** Айырым кеше, шәхес. *Халыҡ ифрадының фекере бер нөктәгә йүнәлдерелһә, улар йәмғиәт булып, милләт эштәре хаҡында фекер йөрөтә[ләр].* М. Ғафури.

**ИФРАТ** [*ғәр.*] *р.* Сиктән тыш, бик. *Ифрат яҡшы. Ифрат яҡын. Ифрат ҡыйын.* ■ *Башҡортостан — ер аҫты хазиналарына ифрат бай ил.* „Ағиҙел", 1969, № 3.

**ИФТАР** [*ғәр.*] *и. иҫк.* Ураҙала ауыҙ асыу мәжлесе. *[Ҡотлояр] ураҙала бөтә тирә-яғын саҡырып бер ифтар яһай.* Д. Юлтый.

**ИФТИРА** [*ғәр.*] *и. иҫк. кит.* Кеше өҫтөнә яғылған ялған ғәйеп; яла. *[Кәбир:] Был ифтира һәм хурлауҙы мин былай ғына ҡалдырмайым.* С. Ҡудаш.

□ **Ифтира итеү** (*йәки* **ҡылыу**) яла яғыу. *Был зат [Муса] .. мәкерле, ялғансы, боҙоҡ күңелле, эттән дә зиядә .. ифтира итеүсе, һис һакланмай ғәйбәт һөйләүсе ине.* Р. Фәхретдинов.

**ИФТИХАР** [*ғәр.*] *и. иҫк. кит.* Кешенең маҡтаныуы, маһайыуы, ғорурланыуы.

□ **Ифтихар итеү** маҡтаныу, маһайыу, ғорурланыу. *Һирәк табыла торған бер сәскә үҙенең баҡсаһында үҫкәнлектән [Айһылыу] һәр ваҡыт ифтихар итә ине.* М. Фәйзи.

**ИХ, и-их** *ымл.* **1.** Ныҡ шатланғанда, һоҡланғанда, кинәнгәндә әйтелә. *Их, шәп була бит беҙҙең Ырымбур ягының ҡарбуҙҙары!* С. Агиш.

**2.** Көслө теләк, хыялды белдергәндә әйтелә. *Их, ҡайтып, ең һыҙғанып эшләргә ине!*

**3.** Көслө үкенес, һағыш белдергәндә әйтелә. *[Барый:] Их, бар ине бит замандар!* Ш. Насыров.— *Их, Бурылҡай, аҙмы төн йөрөнөм, аҙмы сытырҙарҙы тапаным, аҙмы юлдар кистем һинең менән!* Ғ. Сәләм.

**4.** Ныҡ әсенгәндә, көйөнгәндә әйтелә.— *Их, ҡәһәрең! Иң мөһимен әйтмәй үтәләр бит.* Ғ. Лоҡманов.

♦ **Их тигән** бик яҡшы, бына тигән. *[Ғариф ҡарт:] Ҡарсыҡҡа их тигән ҡата тегеп бирәм инде.* Б. Бикбай.

**ИХАНЛАУ** *ҡ. диал.* Ихахайлау.

**ИХАТА** [*гәр.*] *и.* **1.** *шул уҡ* **ишек алды** (*ҡар.* **ишек**). *Ихата эсе.* ■ *Ихата тулы эйәрле ат, өй эсе тулы мылтыҡ-ҡылыс аҫҡан кешеләр.* Й. Солтанов.

**2.** Ҡойма, ситән. *Ихата ҡороу. Ихата ҡылыу.* ■ *Шәғәли .. был [ҡәберҙә тере ятҡан] гәзиздең өҫтөнә ихата ҡылды.* «Башҡорт шәжәрәләре», 1960.

**ИХАТАЛАНЫУ** *ҡ. төш. ҡар.* **ихаталау.** *[Баҡса] бейек таҡта ҡойма менән ихаталанған.* Х. Мохтар.

**ИХАТАЛАТЫУ** *ҡ. йөкм. ҡар.* **ихаталау.** *Баҡсаны ихаталау.*

**ИХАТАЛАУ** *ҡ.* Ҡойма менән уратыу; ҡоймалау, кәртәләү. *Баҡсаны ихаталау.*

**ИХАТАЛАШЫУ** *ҡ. урт. ярҙамл. ҡар.* **ихаталау.**

**ИХАТАЛЫ** *с.* Кәртәләнгән, ҡоймаланған. *Ихаталы йорт. Ихаталы ырҙын.*

**ИХАХА(Й)** *ымл.* **1.** Ҡысҡырып, шарҡылдап көлгән тауышты белдереп әйтелә. *Ихаха тип көлөп ебәреү.*

**2.** *и. мәғ. һөйл.* Ҡысҡырып, шарҡылдап көлгән тауыш. *Раушл ҡайтып ингәндә.., шаярыу һүҙҙәренән, ихахайҙарҙан өй эсе гөр килә.* Б. Бикбай.

**3.** *и. мәғ. һөйл.* Ғәмһеҙ, юҡҡа-барға ҡысҡырып көлөп йөрөгән кеше. *Шәрифъямал ҡайғы тотмай. Ҡаты эш эшләмәне, ихахай булды.*

**ИХАХАЙЛАУ** *ҡ.* Ихаха тип ҡысҡырып көләү. *Ҡыҙҙар көлөшкән арала егет китеп тә барҙы. Һауынсы ҡыҙҙар барыһы ла ихахайлап көлөп ҡалдылар.* Д. Бүләков.

**ИХАХАЙ-МИХАХАЙ, ихахай ҙа михахай** *и. һөйл.* Юҡҡа-барға ҡысҡырып көлгән көлкө. *Бар белгәне ихахай ҙа михахай.*

**ИХБАБ** [*гәр.*] *с. иҫк. кит.* Һөйөклө, ҡәҙерле. *Һәммә ихбаб йәтим ҡалды.* Аҡмулла.

**ИХЛАС** [*гәр.*] *с.* **1.** Саф күңелле, ысын теләкле; эскерһеҙ, рыяһыҙ. *Ихлас кеше. Ихлас күңелдән. Ихлас тойғо. Ихлас һүҙ. Ихлас яуап. Ихлас булыу. // Ихлас ашау. Ихлас һөйләү. Ихлас эшләү. Ихлас уҡыу.* ■ *Һөнәрсе: Теләгең ихлас булһа, әйҙә ултыр. Хәҙер үк серемде асып бирәм.* З. Биишева. *Емеш әбей яусылап өйрәнгән инде ул, ихлас тырышып тора.* Һ. Дәүләтшина. *Һаҡмарым да ихлас ҡотлап, тулҡындарын ҡаға...* А. Игебаев.

**2.** *и. мәғ.* Нимәнелер эшләүгә, булдырыуға ҡарата ысын теләк, эскерһеҙ мөнәсәбәтте белдерә. *Ихласым юҡ, баҫмай аяҡ, йөрөмәй ҡул; әллә ниҙән шикләнәм һәм шомланам.* Ш. Бабич. *Дәртле егеттең теләге ҙур, ихласы шәп.* М. Ғафури. *Ашыҡма, килен, тыңлап бөт мине. Егерме бер йәшемдә тол ҡалып, Әлмөхәмәтемде әҙәм итергә бөтә ихласымды һалдым. Минең дә еләктәй саҡтарым булды.* Т. Ғарипова. **Ихлас менән** берәр нәмәгә бөтә күңелен биреп, бирелеп. *Ихлас менән эшләү.* ■ *Бөгөн .. бөтә ихлас менән ялан, тау-таш гиҙгән бүресе Яҡуп ҡарт та күренмәй.* Т. Хәйбуллин.

**3.** *инш. мәғ.* Үҙ һүҙеңде дөрөҫләр өсөн әйтелә; ысын. *[Нәғим:] Йә, тел сәйнәмә, сығар папиросыңды! [Хәлим:] Ихлас, юҡ.* И. Насыри.

**ИХЛАСЛАНЫУ** *ҡ.* Ихлас күңелле һалыу, ихлас булыу. *Быгаса семья бәхете күрмәгән Ғарифә бик ихласланып донъя көтөргә кереште.* Ф. Иҫәнғолов.

**ИХЛАСЛАП** *р.* Бөтә күңелде биреп, ихлас күңелдән. *Ихласлап уҡыу. Ихласлап һөйләү. Ихласлап ял итеү. Ихласлап тырышыу.* ■ *Институтҡа ситтән тороп уҡырға инергә ихласлап ниәтләнгәйне Йәнгәли.* Н. Ҡотдосов.

**ИХЛАСЛЫҠ** *и.* Саф күңеллелек, эскерһеҙлек. *Ул [Ш. Бабич] ысын шағирҙарға ғына хас ихласлыҡ менән халыҡ бәхете өсөн янып йәшәне.* С. Ҡудаш. *Ологайған һайын ниңә кеше бала сағын иҫләй йышыраҡ? Ғүмере буйы йыйған аҡылына сабый ихласлығы ҡушыла.* Ф. Ғәлиәхмәтов.

**ИХСАН** [*гәр.*] *и.* **1.** *иҫк.* Ярҙам, изгелек. *Башҡорттарҙы тынысландырыу өсөн түрәләр тарафынан күп ихсандар вә яҡшылыҡтар вәғәҙә ҡылынды.* М. Һаҙыев. *Ураҙ хан Ҡыпсаҡ ырыуын яратыпты, барына инғам, ихсан тарататыпты.* «Бабсаҡ менән Күсәк».

**2.** (*баш хәреф менән*) Ир-ат исеме.

□ **Ихсан итеү** яҡшылыҡ, изгелек итеү.

**ИХТАР** [*гәр.*] *и. иҫк. кит.* Иҫкәртеү, киҫәтеү һүҙе; киҫәтмә, иҫкәртмә. *Ҡалмаһын тим, янсығымда валсығым — ихтарсығым.* Ш. Бабич.

**ИХТИБАС** [*гәр.*] *и. иҫк. кит.* **1.** Тотҡарлыҡ.

**2.** Бәүел тотҡарланыуы.

□ **Ихтибас итеү** тотоп алыу, тотоу.

**ИХТИЛАЛ** [*гәр.*] *и. иҫк.* Баш күтәреш, бола. / Революцион ҡуҙғалыш; революция. *Ихтилал йырҙары.* ■ *Ҡанлы һуғыштар булһа ла, ихтилалды яҡларбыҙ. Алға, иптәштәр, алға, бөйөк идеалға* (Йырҙан).

**ИХТИЛАЛСЫ** *и. иҫк.* Баш күтәреүҙә, болала ҡатнашҡан кеше. *Урусов Минзәләлә хөкөм комиссияһы төҙөп, ихтилалсыларҙы шунда уҡ хөкөм итте.* Х. Күскилдин. / Революцион ҡуҙғалышта ҡатнашҡан кеше; революционер. // *Ихтилалсы эшселәр.*

**ИХТИЛАФ** [*гәр.*] *и. иҫк. кит.* Ҡаршылыҡ, килешмәүсәнлек; ыҙғыш, дау. *Һәр нисек берләшергә тырышҡанда, сыҡмаһын арабыҙҙа ҙур ихтилаф.* М. Ғафури.

**ИХТИМАЛ** [*гәр.*] *и.* **1.** Берәр эш, хәл һ. б. булыу, үтәлеү, эшләнеү мөмкинлеге. *Күҙҙәремдең тиҙ генә йоҡоға йомолоу ихтималы юҡ ине әле.* С. Ҡудаш.

**2.** *с. мәг.* Булырға мөмкин, мөмкин булырҙай. *Ихтимал хәл.* ■ *Дошман окобы күренә. Атып ҡуйыуҙары ла ихтимал.* Д. Юлтый.

**3.** *инш. мәг.* Бәлки. *Был йәһәннәм, был һуғыш, был ҡанлы вәхшәт, ихтилал, ер-йыһан аҫты өҫкә әйләнмәйенсә бөтмәҫ, ихтимал.* Ш. Бабич.

◆ **Ихтимал тотоу** теге йәки был хәлдең ошоноһо булыр тип уйлау, ҡарау. *[Сәрүи] мылтәнең иҙән аҫтына төшөп китеүен ихтимал тотоп, .. баҙға төшөп китте.* М. Ғафури.

**ИХТИОЗА́ВР** [*рус.* ⟨ *гр.*] *и.* Борон үлеп бөткән бик эре һөйрәлеүсе диңгеҙ йәнлегенең төрө.

**ИХТИО́Л** [*рус.* ⟨ *гр.*] *и.* Ҡаҙылма балыҡ ҡалдыҡтары булған тау тоҡомон көкөрт кислотаһы менән эшкәртеп яһаған май һымаҡ дарыу.

**ИХТИО́ЛОГ** [*рус.*] *и.* Ихтиология белгесе. *Төньяҡ һыуҙарында яңы төр балыҡ табылған. Ихтиологтар уға «ҡара суртан» тип исем биргән.* «Башҡортостан ҡыҙы», 1968, № 7.

**ИХТИОЛО́ГИЯ** [*рус.* ⟨ *гр.*] *и.* Зоологияның балыҡтырҙы өйрәнә торған бүлеге.

**ИХТИРАҒ** [*ғәр.*] *и. иҫк.* Уйлап табылған яңылыҡ; асыш. *Үләндәрҙең физиология тураһындағы ихтирағтар ер эштәренең барышына ҙур үҙгәреш яһаны.* Ғ. Ғисмәти.

**ИХТИРАҒСЫ** *и. иҫк.* Уйлап табыусы, асыш яһаусы. *Рус һалдаттары араһында ниндәйҙер бер ихтирағсы табылған. Ул тегендә-бында тәгәрәп ятҡан үлектәрҙән тере кешеләргә ышыҡ яһау өсөн мөмкинлек тапҡан.* Д. Юлтый.

**ИХТИРАЗ** [*ғәр.*] *и. иҫк.* **1.** Һаҡлыҡ, абайлыҡ.

**2.** *с. мәг.* Мәғәнәһеҙ, йүнһеҙ. *Ихтираз булыу.*

**ИХТИРАМ** [*ғәр.*] *и.* Ҡәҙер, хөрмәт. *Ихтирам күрһәтеү. Ихтирам ҡаҙаныу.* ■ *Тарихи йырҙарға халыҡ борондан уҡ ихтирам менән ҡараған.* Р. Бикбаев.

□ **Ихтирам итеү** ололау, ҙурлау, ҡәҙер итеү, хөрмәтләү.

**ИХТИРАМЛАУ** *ҡ.* Ҡәҙер-хөрмәт итеү; ихтирам итеү. *Хан янына Талип барған, ти ҙә, .. хан алдына баҫып, ихтирамлап, уны ҙурлап башын эйгән, ти.* Б. Вәлит.

**ИХТИРАМЛЫ** *с.* **1.** Хөрмәтле, ихтирам ителгән. *Ихтирамлы кеше.*

**2.** Хөрмәт итеүсән, ихтирам күрһәтеүсән. *Ихтирамлы бала. Ихтирамлы булыу. // Ихтирамлы һөйләшеү.*

**ИХТИСАП** [*ғәр.*]: **ихтисап итеү** *иҫк. кит.* 1) хисаплау; 2) иҫәпләшеү, кеселеклек күрһәтеү. *Туғаным, һин үҙең дә ихтисап ит, Мәржәниҙең мәжәддиден һин хисап ит.* Аҡмулла.

**ИХТЫЯЖ** [*ғәр.*] *и.* Мохтажлыҡ, хәжәт, талап, кәрәклек. *Өфөнөң нефть эшкәртеү, химия һәм машиналар эшләү промышленносы .. бөтә союз ихтыяждарына эшләй.* М. Хисмәтов.

**ИХТЫЯР** [*ғәр.*] *и.* **1.** Теләк, ирек. *Ихтыяр биреү. Ихтыярға ҡуйыу. Үҙ ихтыяры менән. Кеше ихтыярына буйһоноу.* ■ *[Атай] дилбегәһен ҡулынан ысҡындырып, атты үҙ ихтыярына ҡуйҙы.* С. Кулибай. *Һөйәм һине тигән булды, ихтыярҙан әллә ирекһеҙ* (Халыҡ йырынан). *Күп булып үҫте ҡыяр. Килгән берәһе һыйлана, кем өҙһә лә ихтыяр.* Ә. Вахитова.

**2.** Маҡсатты үтәү һәләтлеге, рухи көс. *Көслө ихтыяр.* ■ *Ҡорос ихтыяр, ҡайнар теләк бөтәһен дә еңә.* С. Агиш. *Һүҙ беҙҙеке. Беҙ һәр ерҙә. Беҙҙә ихтыяр ныҡ. Юл ҡуймабыҙ яңы һуғышҡа.* Х. Ғиләжев.

□ **Ихтыяр итеү** ирек ҡуйыу, рөхсәт итеү. *Көтөр .. йүгерек туры атын ҡыҙына менеп йөрөргә ихтыяр итә.* „Башҡортостан ҡыҙы“, 1968, № 5.

◆ **Ихтыяр(ы) үҙендә** теләһә ни эшләһен, ни эшләһә лә рөхсәт. *[Әбйәлил:] Ихтыяр үҙеңдә, мин көсләшеп тормайым* (Әкиәттән). **Ихтыярҙан тыш** (*йәки* **башҡа**) ирекһеҙҙән. *[Мөлөк ағайҙың] ихтыярҙан тыш атылып сыҡҡан күҙ йәштәре бәбәктәренән ашып .. ағып төштөләр.* Т. Хәйбуллин.

**ИХТЫЯРАН** [*ғәр.*] *р. иҫк. кит.* Ирекле рәүештә, үҙ иркең менән. *Ихтыяран батшаға баш һалдығыҙ һеҙ [башҡорттар].* С. Яҡшығолов.

**ИХТЫЯРИ** [*ғәр.*] *с.* Ирекле, кешенең үҙ теләгенә ҡуйылған. *Ихтыяри эш.* ■ *[Ғабдрахман:] Кәюмов әфәнде ихтыяри мосолман полкы төҙөүҙе .. һөйләне.* А. Таһиров.

**ИХТЫЯРЛЫ** *с.* **1.** Теләк, хоҡуғы сикләүһеҙ; ирекле. *Ихтыярлы булыу.* ■ *Өйлә намаҙынан сығыуға аш ашап, аштан һуң теләгән эшеңде эшләргә ихтыярлы булаһың.* М. Ғафури.

**2.** Маҡсат ынтылышы һәм рухи көсө ныҡлы. *Ихтыярлы кеше үҙ маҡсатына ирешмәй ҡуймай.* И. Абдуллин.

**ИХТЫЯРҺЫҘ** *с.* **1.** Теләге, хоҡуғы сикле; ирекһеҙ.

**2.** Маҡсат, ынтылышы һәм рухи көсө йомшаҡ, ихтыяры (2 мәғ). юҡ. *Шәүәли .. башына килгән ҡыйыу теләкте үтәргә үҙендә көс таба алмаған ихтыярһыҙ бер нәмәкәй ине.* Б. Бикбай.

**ИХТЫЯРҺЫҘҘАН** *р.* Теләктән тыш; ирекһеҙҙән. *Ихтыярһыҙҙан миңә лә туктап ҡалырға тура килде.* Ғ. Ғүмәр.

**ИХУАН** [*ғәр.*] *и. иҫк. кит.* **1.** Туғанлыҡ, ҡәрҙәшлек.

**2.** Туғандар, ҡәрҙәштәр, дуҫтар. *Фәҡире һәм ғәни солтан һәба ихуан улды дилләрҙән.* М. Өмөтбаев.

**ИХЪЯ** [*ғәр.*]: **ихъя ҡылыу** (*йәки* **итеү**) *иҫк. кит.* терелтеү, тергеҙеү. *Бик ауыр булһа ла яңы мәҙрәсәләр ихъя ҡылырға тырышайыҡ.* Ғ. Ибраһимов.

**И-ҺА-ҺА** *оҡш.* **1.** Ат кешнәгәндә сығарған тауышты белдергән һүҙ. *И-һа-һа итеү.* ■ *Күк бейәһе уның [Нурлыштың] и-һа-һа тип ҡаршы ала ине.* С. Ҡудаш.

**2.** *кусм.* Ҡысҡырып, йәмһеҙ итеп көлгәндә белдергән һүҙ. *Бер туктауһыҙ и-һа-һа ла и-һа-һа! Шундай яуаплы эшкә кеше шулай ҡарай тиме?* «Һәнәк», 1966, № 3.

**ИҺАҺАЙ** *и. һөйл.* Көлгән һымаҡ иһа-һай тип ҡысҡырған ҡош.

**ИҺАҺАЙЛАУ** *ҡ.* Урынһыҙға шарҡылдап, ҡысҡырып көлөү. *[Рәкиә] өс кенә бөртөк көнбағышты Кәрим ағайҙың битенә бәрҙе лә, иһаһайлап китеп барҙы.* И. Ғиззәтуллин. *[Ҡайны — Гөлйөҙөмгә:] Тьфу! Ирҙәүкә, оятһыҙ! Һеперелеп йөрөйһөң шунда, иһаһайлап.* Ф. Иҫәнғолов.

**И-ҺИ-ҺИ** *окш.* Мыҫҡыллап көлгәндә белдергән һүҙ. *[Улы:] И-һи-һи, эсәй, .. һин тормоштан бик артта ҡалғанһың икән.* Ш. Насыров.

**ИҺӘ** *ярҙ. к.* **1.** Ҡылымдың үткән заман формаһына ҡушылып, шарт ҡылым яһай.— *Урыҫ байының бер аты ҡазаланы иһә — бер айлыҡ һуғым.* Һ. Дәүләтшина.

**2.** Ҡаршы ҡуйыуҙы белдерә. *Көршәк тулы булһа, ныҡлығын ул оҙаҡ йылдар һаҡлай, ә буш көршәк иһә тора-тора үҙ алдына сатнай.* М. Кәрим.

**3.** Нимәгәлер айырым баҫым яһағанда йәки айырым алып үҙен бер башҡа күрһәткәндә ҡулланыла. *Һалам һөрөлгән ергә сығарып эҫкертләнде.* ■ *Тәбиғәт ул кешенең йәшәү урыны. Кеше иһә .. ошо тәбиғәттең бер өлөшө.* «Совет Башҡортостаны», 1967, 1 апрель.

**ИҺӘННӘҮ** *к. кар.* **иһәнәү**. *Ғариф староста уянып китте, .. тороп ултырҙы, яңағы ҡарышҡансы иһәннәне.* Ж. Кейекбаев.

**ИҺӘНӘҮ** *к.* Йоҡо баҫҡанда, ирекһеҙҙән ауыҙҙы киң асып, бик тәрән тын алыу; иҫнәү, иһәннәү.

**ИШ** *и.* **1.** Исем, дәрәжәһе менән бер үк кимәлдәге тиң; тиңдәш. *Иш(е) булыу. Иш(е) итеү. Иш(е) күреү. Иш(е) һанау.* ■ *Ир-арыҫлан булһаң, иш күрәләр, ҡайһы ғына ергә барһаң да* (Халыҡ йырынан). **Иш итеү** үҙеңә тиң тип һанау, тиңһенеү, тиң күреү.— *Бер кемде лә иш итмәйһең,— тип [Зөлхизәгә] үпкә белдерәләр егеттәр.* З. Биишева.

**2.** Ҡуштың, парҙың һыңары; пар. *Ише бар. Ише булыу. Ише итеү.*

**3.** Ниҙеңдер төҫ-сифат яғынан оҡшаш тиңе. *[Әбей:] Ул яулыҡтың бер ерҙә лә ише юҡ* (Әкиәттән).

**4.** Иптәш, дуҫ. *Иш булыу.* ■ *Атаһы юҡта әсәгә [бала] көңгөр-ҡаңғыр иш ине.* «Ҡараһаҡал».

**5.** *бәйл. функцияһында* **Ише** формаһында кем йәки нимәнеңдер сифатын, эш-хәрәкәтен икенсе менән сағыштырғанда, уға оҡшаш тапҡанда ҡулланыла. *Минең ише. Һинең ише.* ■ — *Ҡатыҡ сәй ише буламы, туҡлыҡлы бит ул.* Һ. Дәүләтшина. *Был кеше, ялан яҡ башҡорттарҙыҡы ише, йәлпәк танаулы.* Т. Килмөхәмәтов.

◆ **Бер иш** бер төҫлө, бер төрлө. *Бер иш йорттар. Бер иш кейем. Бер иш итеү. Бер иш яһау.* ■ *Барыһы ла бер иштән биле һығылып торған ҡап-ҡара шинель, һәйбәт бүрек кейгән.* К. Кинйәбулатова. **Иш янына ҡуш** *йәки* **ишкә ҡуш [булыу]** нимәгәлер өҫтәмә ҡушымта [булыу]. *Кешеләр эргәмә ултырмай, бете йоға, ти. Етмәһә, иш янына ҡуш тигәндәй, баш ҡутырлап китте.* С. Агиш.

● *Аш табылыу бер бәхет, иш табылыу бер бәхет.* Әйтем. *Иш — ише менән, ҡуш — ҡушы менән.* Мәҡәл. *Тун тиреһе ише менән.* Мәҡәл. *Яманға яман иш була.* Мәҡәл.

**ИШАН** [*фарс.*] *и.* Мосолмандарҙа мөриттәрҙе уҡытып тәрбиәләй торған дин әһеле; шәйех, мөршид. *Ишан хәҙрәттәре. Ишан булыу.* ■ *Ишан мәжлес йыйыр булһа, мөрид барыр, ишан ашын ашаһа, ул хайран ҡалыр* (Бәйеттән). **Ишан таяғы** ишанлыҡ мираҫы һәм шул мираҫтың билдәһе булып һаналған таяҡ. *Ишек башында йәшелгә буялған ишан таяғы.* Т. Хәйбуллин.

● *Ишанға ҡул биргән, шайтанға юл биргән.* Мәҡәл. *Ишандан нишана тыуыр, нишананан ишан тыуыр.* Мәҡәл.

**ИШАНЛЫҠ** *и.* Ишан булыу, ишан дәрәжәһе. *Был кеше [Хажи] заманына күрә аңлы булып, яңылыҡ тарафтары, ишанлыҡ һәм суфыйлыҡҡа ҡаршы ине.* М. Ғафури.

□ **Ишанлыҡ итеү** ишан булып тороу, мөриттәр менән етәкселек итеү.

**ИШАРА** [*ғәр.*] *и.* **1.** Һүҙһеҙ аңлатыу өсөн яһалған төрлө ҡул, баш хәрәкәте; ым. *Ишара яһау.* ■ *[Казаков] ингән кешеләргә ҡулы менән ултырырға ишара яһаны.* С. Агиш.

**2.** *кар.* **ишарат** 3.

□ **Ишара итеү** (*йәки* **ҡылыу**) ниҙелер аңлатыр өсөн ҡул, баш менән бер төрлө хәрәкәт яһау. *Әсәй башы менән ишара ҡылып, янына саҡырып алды.* М. Ғафури.

● *Аҡыллыға ишара ла етә.* Мәҡәл.

**ИШАРАЛАУ** *к.* **1.** Ишара яһау, ишара итеү; ымлау. *Ғиндулла ағай .. ҡул менән ишаралап үҙенә саҡырҙы.* Ғ. Аллаяров.

**2.** *күсм.* Ситләтеп аңлатыу, нимәгәлер фекерҙе йүнәлтеү. *Артабан автор яңынан үҙ геройҙарына ҡайта, уларҙы һүрәтләгәндә килер көндәргә ишаралап ҡуя.* Р. Бикбаев.

**ИШАРАТ** [*ғәр.*] *и.* **1.** *кар.* **ишара** 1. *„Ишарат — аҡыллыға“ тигән һүҙ бар, артыҡ һүҙ — әҙәпһеҙлек аҫыл затҡа.* Аҡмулла.

**2.** Билдә, тамға. *Бисәкәйҙең йөҙөндә нур ишараты ҡалмаған.* Ә. Зәйнуллин.

**3.** Кемдең йәки ниҙеңдер кәүҙәләнеше булған һүрәт, шәүлә. *Бер йән ишараты юҡ. / мыҫҡ.* Йорат (кемде йәки ниҙелер түбәнһетеп, мыҫҡыллап әйткәндә ҡулланыла). *Һыйыр ишараты. Өй ишараты.* ■ *Түрҙә — дүрт бағана ҡағып, юнылмаған таҡталарҙан этмәләштереп яһаған өҫтәл ишараты.* Ф. Иҫәнғолов.

**ИШҒАЛ** [*ғәр.*] *и. иҫк. кит.* **1.** Мәшғүллек. **2.** Баҫып, биләп алыш.

□ **Ишғал итеү** 1) мәшғүл итеү; 2) баҫып алыу, биләү. *[Отрядтар] үҙҙәренә билдәләнгән ерҙе ишғал итәләр ине.* Ш. Хоҙайбирҙин.

**ИШЕК** *и.* Йорт, бина һ. б. ҡоролманың эсенә инеп-сығып йөрөү өсөн стенаһына яһалған уйым һәм шул уйымға беркетелгән асылмалы-ябылмалы ҡапҡас. *Артҡы ишек. Быяла ишек. Өй ишеге. Машина ишеге. Урта ишек. Ишек арты. Ишек ҡашы. Ишек тупһаһы. Ишек тотҡаһы. Ишек асыу. Ишек бикләү. Ишектән инеү. Ишек келәһе. Ишекте ҡағыу. Ишектән сығыу. Ишекте ябыу.* ■ *Шул саҡта тирмәм ишеген асырға ҡуштым, төн буйы тыңланым моңон һандуғас ҡоштоң.* Салауат Юлаев. **Асамай ишек** бер-береһенә ҡапма-ҡаршы булған ишектәр. .. *Шунан асамай ишектән инә торған фатирҙа йәшәгән икенсе күрше ҡатыны килеп инде.* К. Мәргән. **Асмалы ишек** ике яҡҡа асыла торған итеп яһалған ишек. **Ишек ауыҙы** ишектең инеп сығыу урыны. *Халыҡ һаман ишек ауыҙына тығыла. Гөлбикә лә, этелә-төртөлә, баҫҡыстан*

*күтәрелде.* Р. Низамов. **Ишек башы** ишек ҡашының өҫтө. **Ишек төбө** ишектән ингән ер. *Бер ваҡыт батша һарайына бер хәйерсе килеп ингән дә, ишек төбөнә генә ултырған* (Әкиәттән). **Ишек бауы** 1) ишек тотҡаһы. *Килен тауышһыҙ-ниһеҙ генә ишеккә йүнәлде. Ишек бауын тотҡанда Ғимайға күҙ ташлап, йылмая биреп куйҙы.* И. Насыри; 2) *этн.* боронғо туй йолаһы буйынса, йәшерелгән ҡыҙҙы алырға барғанда, ишек асҡан еңгәгә кейәү биргән бүләк. *Ишек бауын һатыулашыу.* ■ *Өйгә барғас та ишекте асмайҙар, ишек бауы бер һум тиҙәр. Беҙ илле тин бирәбеҙ. Ҡәйенйеңгә риза булмай, аҡсаны алмай.* М. Буранғолов.

♦ **Ишегенең ҡайһы яҡҡа асылғанын белмәйем** өйөнә саҡырғаны, өйөн күрһәткәне юҡ, тигән мәғәнәлә ғәйепләп әйтелә. **Ишек аҡсаһы** *кар.* **ишек бауы 2. Ишек алды** өй янындағы кәртәләп алынған майҙан. *Ишегем алды йәшел үлән, ҡаҙ ашарҙай үлән ул түгел* (Халыҡ йырынан). **Ишек быуыу** *этн.* ҡыҙ йортона килгән кейәүҙе, бүләк алғансы, ишектән индермәй тотоу (балдыҙ, ҡәйнештәре шулай шаяра). **Ишек яғы яҡҡырмау** өҙләкһеҙ, бер туҡтауһыҙ инеп-сығып йөрөү. *Староста асыуланып та ҡараны, ә улар һаман, ишек яғы яҡҡырмай уның өйөнә инеп-сығып торҙо.* Ж. Кейекбаев.

● *Ҡатын кәрендәше ҡаҙан янында, ир кәрендәше ишек төбөндә.* Мәҡәл.

**ИШЕКЛЕ-ТҮРЛЕ: ишекле-түрле йөрөү** бер ишек төбөнә, бер түргә йөрөү. *Ул [Хәйбуллин] Ҡунаҡҡол өйөндә ишекле-түрле йөрөнө, ни тынысланa, ни яуап таба алмай өҙгөләнде.* Х. Ғиләжев.

**ИШЕЛДЕРЕҮ** *к.* Ишелгән хәлгә килтереү. *Ишелдереп ҡуйыу.* ■ *Аҡһыл ялын ишелдереп, тулҡындар йөҙә нисек.* А. Игебаев.

**ИШЕЛЕҮ** [1] *к.* **1.** *төш. кар.* **ишеү** [1]. *Тау тишегендә теге иргәйелдең мең ҡарыш һаҡалынан ишелгән арҡан һаман һалбырап тора икән, ти* (Әкиәттән).

**2.** *кар.* **ишеү** [1]. *Таштар ҡултығында паровоздың аҡ толомо ҡалды ишелеп.* Ғ. Сәләм.

**ИШЕЛЕҮ** [2] *к.* **1.** Таралып емерелеү, күп булып ауыу. *Ер ишелә. Тау ишелә. Шахта ишелгән. Яр ишелде. Ишелеп ятыу.* ■ *Ул туҡтауһыҙ атлай юлы буйлап, тау-ташлыҡ ятһа ла ишелеп.* Ғ. Сәләм. *Төрөктәргә атҡан саҡта Балкан тауы ишелде* (Бәйеттән).

**2.** Хәл ҡылымдың *-п* формаһында ҡушма ҡылымдың беренсе компоненты булып, «бик күп», «мул» тигән мәғәнәне аңлата. *Ишелеп үҫеү. Ашлыҡ ишелеп үҫкән.* ■ *Сафуан ҡарҙы сокоп ҡараны. Эре көртмәләләр йәйге кеүек ишелеп яталар ине. Йыйырға ғына кәрәк!* З. Хисмәтуллин. *Ҡыуаҡлыҡтарҙың буйында ишелеп үҫә еләк.* Ә. Вахитова. *[Олонбикә:] Тегендә лә ишелеп ятҡан байлыҡ юҡ ине, бында ла өйөлөп тормай.* Ғ. Ғүмәр. .. *Малдары ла үрсей уның [колхоздың], ишелеп уңа ашлығы.* А. Игебаев.

♦ **Өҫкә ишелеп тороу** бик оҙон, бейек, ҙур булып өҫкә йығылырға әҙерләнгән һымаҡ тороу (тау-таш, ҡая, урман, ағастарға ҡарата). *Ҡарағайҙар өҫкә ишелеп тора.* ■ *Урман өҫкә ишелеп торһа ла, көҙҙән утын әҙерләнмәгән.* Б. Бикбай.

**ИШЕЛЕШЕҮ** *к. урт. кар.* **ишелеү** [1]. *Ҡурай менән ҡымыҙ .. уйнаны. Йомшаҡ аҡ ебәктәй ишелешеп, бар тәбиғәт тыңлап иланы.* Х. Ғәбитов.

**ИШЕЛМӘ** [1] *и.* Емерелеп төшкән ер, тау тоҡомо. *Тау ишелмәләре.*

**ИШЕЛМӘ** [2] *с.* Уралып-уралып, ишелеп торған; ишеп яһалған. *Ишелмә сым.*

**ИШЕМТЕЛӘҮ** *к. кар.* **ишәйтеү** 2.

**ИШЕМТӘ: ишемтәгә ҡушымта** бер нәмәгә икенсе оҡшаш нәмә өҫтәлгәндә әйтелә; ишкә ҡуш. *Инде һүҙ бөттө тигәндә, Ғарифулла бабай торҙо. .. Уның һүҙен ишемтәгә ҡушымта итеп кенә тыңларға уйлағайнылар, ҡарт туҙҙы ла китте.* Ә. Вахитов.

**ИШЕРЕЛЕҮ** *к.* **1.** *төш. кар.* **ишереү.**

**2.** *кар.* **ишереү.**

**ИШЕРЕҮ** *к.* Күп итеп емереү, ишеү (3 мәғ.). *Ишереп төшөрөү.*

**ИШЕТЕЛЕҮ** *к. төш. кар.* **ишетеү.** *Йыр ишетелә. Тауыш ишетелә. Хәбәр ишетелде. Ишетелеп ҡалыу. Ишетелеп тороу.* ■ *Таш башынан бик моңло бер йыр ишетелә ине. Ҡатын-ҡыҙ тауышы, һүҙҙәре асыҡ ишетелмәй.* Н. Мусин. *Төнгө тынлыҡта оло юл буйлап юрттан ат тояғының тупылдауы оҙаҡ ҡына ишетелеп торҙо.* М. Тажи.

**ИШЕТЕЛЕШ** *и. махс.* Ишетелеү дәрәжәһе, ишетелеү асыҡлығы. *Ишетелеше яҡшы. Ишетелеше насар.*

**ИШЕТЕҮ** *к.* **1.** Төрлө тауыштарҙы, өндәрҙе ҡолаҡ менән һиҙеү, ҡабул итеү. *Ишетеп ҡалыу. Ҡолағы ишетмәй.* ■ *Алпамышаның һыҙғыртҡанын ишетеп, .. ҡошо килеп ҡунған.* „Алпамыша".

**2.** Кешенең әйткәнен иғтибарға, аңға алыу; тыңлау. *Мөхәһиттән был кәңәште ишеткәс, миңә бик уңайһыҙ тойолғандай булды.* Т. Йәнәби.

**3.** Низер хаҡында хәбәр алыу, хәбәрҙәр булыу. *Ишетеп белеү. Ишетә йөрөү.* ■ *Аҡбулаттан хат өҙөлдө. Бер аҙҙан мин уның һәләк булғанын ишеттем.* З. Биишева.

♦ **Ишетмәгәнде ишетеү** көтмәгән, оҡшамаған хәбәр ишетеү. *[Рәхимә — Айбулатҡа:] Бына һиңә кәрәк булһа! Ишетмәһәң ишет! Һеҙгә ни етмәй тағы .. Ул ни тигән башҡа сығыу?* Һ. Дәүләтшина. **Күҙ күргән, ҡолаҡ ишеткән** бығаса билдәле булған. *Тау батыр тауҙы икенсе ергә күсереп алып киткән. .. Был ысынлап та күҙ күргән, ҡолаҡ ишеткән эш түгел ине* (Әкиәттән). **Ҡолағың менән ишет** *йәки* **ишетһен ҡолағың** *кар.* **ҡолаҡ. Һүҙ ишетеү** кемдер тарафынан әрләнеү, битәрләнеү.

● *Ауыҙы әйткәнде ҡолағы ишетмәй.* Әйтем. *Ҡалалағы ишетмәгән, далалағы ишеткән.* Әйтем.

**ИШЕТМЕШ** *с.* Ишетеп белгән, ишетелгән. *Ишетмеш хәбәр. Ишетмеш һүҙ. Ишетмеште һөйләү. Ишетмештән белеү.* // *Ишетмеш кенә белеү.*

**ИШЕТТЕРЕҮ** *к.* **1.** *йөкм. кар.* **ишетеү.** *Ишеттереп уҡыу. Уҡып ишеттереү.* ■ *Сарсынбай уға [Алламоратҡа] ишеттермәй генә ҡаты һүгенде.* Һ. Дәүләтшина. *[Сәғиҙә:] Яратҡан йырҙарығыҙҙы миңә ишеттерегеҙ [әле].* М. Тажи.

**2.** Берәй кеше тураһында ситтә булған хәбәрҙе шул кешенең үҙенә һөйләү, еткереү. *Һүҙ ишеттереү. Ғәйбәт ишеттереү.*

**ИШЕҮ** [1] *к.* **1.** Ике-өс тындан бороп, алмаш-тилмәш салып, бау яһау. *Арҡан ишеү. Бау ишеү. Еп ишеү.* ■ *[Әбйәлил] ҡабыҡты һыуға һалып шешендергән дә, һалабаш һуйған. Шунан оҙон итеп арҡан ишергә тотонған* (Әкиәттән).

**2.** *диал.* Сиратыу. *Йөн ишеү.*

♦ **Ҡомдан арҡан ишеү** мәғәнәһеҙ эште эшләп юҡҡа ваҡыт әрәм итеү. *[Сәғит — Вәлиғә:] Нишләп бында ятаһың, һаман ҡомдан арҡан ишеп, күлде күккә аҫырға әҙерләнәһеңме?* А. Таһиров.

● *Бер ҡылдан арҡан ишеп булмай.* Мәҡәл.

**ИШЕҮ** [2] *к.* Кәмә йәки башҡа нәмәне йөҙҙөрөү өсөн ишкәк йәки башҡа нәмә менән һыуҙы ярып этеү. *Ишкәк менән ишеү. Ҡул менән ишеү.* ■ *Ә ҡаршыла Сәйҙел ишкәк ишә, тулышып сыҡҡан мускул иттәре.* Ғ. Сәләм.

**ИШЕҮ** [3] *к.* **1.** Тотош-тотош, күп-күп итеп аҫҡа емереү (таш, тупраҡ һымаҡ нәмәне). *Бер мендем дә тауға, бер төштөм, ак таштарҙы түбән мин иштем.* Й. Солтанов. *Был ҡылыс Урал ташынан, .. сапһаң, ҡаяны ишерлек.* С. Кулибай.

**2.** *күсм.* Ниҙелер самаһыҙ күп итеп башҡарыу. *Ҡатын эшләй, ә был «сырхау» [ир] йоҡоно ишә генә.* И. Әхтәмъянов.

● *Тел тигәндә телеп һала, эш тигәндә ишеп һала.* Мәҡәл.

**ИШКЕС** *и. ҡар.* **йөҙгөс.**

**ИШКӘК** *и.* Бер башы яҫы итеп яһалған, кәмәне, һалды ишә торған махсус ҡулайлама. *Селтәрле ишкәк. Һырлы ишкәк. Ишкәк ишеү.* ■ *Ҡыуғын башлығы Муса ағай ишкәктәге ишкәкселәргә: „Ярға һуҡ! — тип ҡысҡырыу менән өс кеше .. ауыр ишкәкте бер нисә тапҡыр һыуға батырып, ярға ҡарай һуҡты.* М. Тажи.

**ИШКӘКЛЕ** *с.* Ишкәк ҡуйылған, ишкәге бар. *Ике ишкәкле кәмә.*

**ИШКӘКСЕ** *и.* Ишкәк ишкән кеше. *Һал борола, ҡушма аҡтарыла, ишкәкселәр ҡайырып ишкәндә.* Ғ. Йосопов.

**ИШҠЫРҘА** *и. диал.* Ҙурат.

**ИШЛЕ** *с.* **1.** Ише, пары булған. *Ишле кеше. Ишле ҡата.*

**2.** Күп һанлы, күп. *Ишле мал. Ишле ғаилә.* ■ *Дим буйында башҡа хан булмаған, ишле халыҡтың байтағы Урал буйына таралып ултырған, ти* (Әкиәттән).

● *Ишле ише менән.* Әйтем.

**ИШЛӘНЕҮ** *к.* **1.** Ишле, парлы булыу; берәүҙән икәү булыу. *Балалар ишләнеп теҙелде.* / *һөйл.* Өйләнешеү.

**2.** Артыу, күбәйеү. *[Гөлзифа:] Бына, улым, беҙ һин ҡайтыуға шулай ишләнеп торҙоҡ. Тағы бер Яубасаров артты!* Б. Бикбай.

**ИШЛӘҮ** *к.* Ишле, парлы итеү. *Ишләп ултыртыу.*

**ИШЛӘШЕҮ** *к.* Үҙ-ара иш, иптәш, дуҫ булышыу. *Ул [Ишбулды] элек йәш сағында .. кеше менән ишләшә алмай, урындан-урынға күсеп йөрөгән.* И. Ғиззәтуллин. / *һөйл.* Өйләнешеү. *[Морат:] Әгәр риза булһаң, давай көҙгә ишләшәйек.* Ҡ. Даян.

**ИШМӘ** [1] *и.* Көмөш менән уратып ишелгән беләҙек.

**ИШМӘ** [2]**: ишмәһен ишеү** *һөйл.* бәйләнеп, әрләп кәмһетеү йәки башҡаса яфалау, ғазаплау. *[Ҡарынбай] инде алған дүртенсе бисә, хәҙер уның ишмәһен ишә.* С. Ҡудаш.

**ИШМӘКӘЙ** *и.* Ишелдереп яһаған биҙәк.

**ИШРАҠ** *[ғәр.] и. иҫк. кит.* **1.** Яҡтылыҡ, нур.

**2.** Иртәнге намаҙҙан һуң, ҡояш сыҡҡас уҡыла торған өҫтәмә намаҙ (суфый кешеләр генә уҡый).

**ИШТЕРЕҮ** *к. һөкм. ҡар.* **ишеү** [1]. *Арҡан иштереү.*

**ИШТИҒАЛ** [*ғәр.*] *и. иҫк. кит.* Шөғөл, эш.

□ **Иштиғал итеү** шөғөлләнеү, эшләү.

**ИШТИРАҠ** [*ғәр.*] *и. иҫк. кит.* Уртаҡлыҡ, берлек, ҡатнашлыҡ.

□ **Иштираҡ итеү** (*йәки* **ҡылыу**) уртаҡлашыу, ҡатнашыу, бергәләшеү. *Партия тарихын, революция хәрәкәтен тикшереү өсөн .. бөтә коммунистарҙың иштираҡ итеүҙәре тейеш.* Ш. Хоҙайбирҙин.

**ИШТИҺА** [*ғәр.*] *и. иҫк. кит.* Теләк, аппетит. *[Саяф] боронғоса парлаҡ замандағыса, иштиһа менән һәр ике тәрилкәне ялт иттерҙе.* С. Агиш.

**ИШТӘК** *и. диал.* Истәк.

**ИШҺЕНЕҮ** *к.* Тиң күреү, ишкә (1—3 мәғ.) һанау, тиңһенеү. *[Урал — Шүлгәнгә:] Һинең ыулы йөрәгең .. яҡшылыҡты тиңһенмәҫ, әҙәм затын ишһенмәҫ.* «Урал батыр».

**ИШӘЙ: ишәй менән ҡушай** бер-береһенән айырылмай, һәр саҡ бергә йөрөгән кешеләр тураһында шаяртып әйтелә.

**ИШӘЙЕҮ** *к.* Һан яғынан күбәйеү, артыу. *Быларҙың беренән-бере батыр улдары, беренән-бере матур ҡыҙҙары тыуып ҡына торған, ти. Балалары, балаларының балалары ишәйеп китеп, бара-бара бер ауыл булған, ти* (Әкиәттән).

**ИШӘЙТЕҮ** *к.* **1.** Һан яғынан күбәйтеү, арттырыу. *Әйҙә шулай йылдан-йылға мал ишәйт, йондоҙҙарҙан ҡор тупла ла дан ишәйт!* М. Илбаев.

**2.** *һөйл.* Әсегән икмәк башына он өҫтәп баҫыу. *Ҡамырҙы ишәйтеү.*

**ИШӘК** *и.* **1.** Йомро тояҡлы, оҙон ҡолаҡлы, көлһыу төҫтәге, ат һымағыраҡ бәләкәй эш хайуаны. *Ҡырағай ишәк.* ■ *Ҡасандыр Ырымбур урамдарында дөйә менән ишәк күп булған, тиҙәр.* К. Мәргән. .. *Ҡайҙа ҡарама — ишәк. Йөк тә ташыйҙар, менеп тә йөрөйҙәр үҙҙәрен. Шундай ирмәк ҡысҡыра улар!* Я. Вәлиев.

**2.** *һөйл.* Аңра, аңһыҙ кешегә ҡарата әйтелә. .. *Һалдаттың нисек студент булыуы мөмкин икәнен күҙ алдына ла килтерә белмәй был старшина. .. Студенттарҙың элекке революцион хәрәкәте был ишәктең ҡолағына инеп ҡалған да шуны бутай...* Һ. Дәүләтшина.

♦ **Иртәгеһен ишәк ҡайғыртҡан** *йәки* **иртәгеһе — ишәккә** берәй нәмәне алдан уйлай, ҡайғырта белмәгән, ғәмһеҙ кешегә ҡарата әйтелә. *Бөгөнгөһөн уйлайым, иртәгеһен буйлайым, иртәгеһе — ишәккә, тип ҡулым һелтәп ҡуймайым.* Р. Ғарипов. **Ишкәнһең ишәк сумарын** нимәләр эшләгәндә эште боҙған кешегә ҡарата әйтелә. *„Пулемёт әҙер буласаҡ. Уның һаҡлығы тәьмин*

*ителгән", тигән булаһың тағы. Әй мәмәй ауыҙ, ишкәнһең ишәк сумарын,.. улар хәҙер һинең менән пулемет телендә һөйләшә башлаясактар.* И. Насыри. **Ҡартая белмәгән ҡарт ишәк** үҙен ололарса тота белмәгән оло кешенән көлөп әйтелгән һүҙ.

● *Алйот юлдаш булмаҫ, ишәк моңдаш булмаҫ.* Әйтем. *Аттан төшөп ишәккә менмәйҙәр.* Әйтем. *Ишәк маҡтанып толпар булмаҫ.* Мәҡәл. *Ишәк түшәктең ҡәҙерен белмәҫ.* Мәҡәл. *Ҡунаҡ хужаның ишәге.* Әйтем. *Һыйлағанды һыйыр белмәҫ, һыйпағанды ишәк белмәҫ.* Әйтем.

**ИШӘЛӘНЕҮ** *к.* Арҡыры-торҡоро итеп, айпан-тайпан баҫыу (аяҡтарға ҡарата). *Нык арыттты, аяҡтар ишәләнә башланы.* ■ *Бүрене ишәләнгән сағында ҡыуып барып тоттолар* (Хикәйәттән).

**ИШӘНЕҮ** *к. диал.* Сирҡаныу. *Һыу һыуыҡ, инергә ишәнеп торам.*

**ИЮЛЬ** [*рус.* ⟨ *лат.*] *и.* Календарь йылының етенсе айы (*кар.* **календарь**). *Июль айы.* ■ *Июнь үткән, июль башланған саҡ — йәй уртаһы. .. Игендәр өлгөрөп килгән, еләктәр бешкән саҡ.* Д. Исламов.

**ИЮНЬ** [*рус.* ⟨ *лат.*] *и.* Календарь йылының алтынсы айы (*кар.* **календарь**). *Июнь айы.* ■ *Майҙы үткәргәс, халыҡтар, эш менән июнь етер, милли байрамдар килерҙәр, бик хозур йыйын етер.* Ш. Бабич.

# Й

**Й** Башҡорт алфавитының ун өсөнсө хәрефе.

**ЙОБАЛҠЫ** *с. диал.* Йыбытҡы.

**ЙОБАНЫУ** [1] *к. диал.* Мыштырлау, ығышыу.

**ЙОБАНЫУ** [2] *к. диал. кар.* **йыбаныу** [1].

**ЙОБАНЫУ** [3] *к. диал.* Йыуаныу.

**ЙОБАТАЙЛАУ** *к. диал.* Бөтмөрләү. *Йобатайлап эшләү.*

**ЙОБАТЫУ** *к. диал.* Йыуатыу.

**ЙОГ** [*рус.* ⟨ *санскр.*] *и.* Үҙ-үҙеңде рухи, психик һәм физик яҡтан тота белеү ысулдары, юлдары тураһындағы боронғо һиндтәрҙә таралған дини философик тәғлимәткә эйәреүсе.

**ЙОҒАНЫС** [1] *и. диал.* Йоғошло ауырыу.

**ЙОҒАНЫС** [2] *и. диал.* Яғыныс.

**ЙОҒАШ** *с. диал.* Оҡшаш.— *Уйна, улым, уйна, Сәлим. .. Минең дә һинең кеүек улым бар ине. Уға ла атаһы: «Хәлимгә Сәлим бик йоғаш», тип, һинең исемде ҡушырғайны.* И. Ғиззәтуллин. // *[Ҡаҙаҡтарҙың] баштарына кейгән томаҡтары дөйәнең атлауына йоғаш яй ғына һелкенә.* Ғ. Ғүмәр.

**ЙОҒОЛОУ** *к.* **1.** Тейеп, һыланып, эҙ ҡалдырыу; йоғоу, яғылыу. *Һөйөклөмдөң сәсен тотҡайным мин, йоғолған был хуш еҫ уның сәсенән.* М. Ғафури.

**2.** *диал. кар.* **ҡағылыу** 4.

**ЙОҒОМЛО** *с. диал.* Йоғошло.

**ЙОҒОМҺОҘ** *с. диал.* Йоғошһоҙ.

**ЙОҒОНДОРОУ** *к.* **1.** Ҡул менән тейҙереү; ҡағылдырыу, орондороу. *Кешене йоғондороу.*

**2.** Яҡын мөнәсәбәт булдырыу, яҡын итеү; яҡынлатыу. *Булыр-булмаҫ кешене үҙеңә йоғондорма.*

**3.** *күсм.* Кешенең аңына, күңеленә һеңдереү. *Йоғондороп һөйләү.*

**ЙОҒОНОС** *и.* Аңға һеңерлек, күңелгә ятырлыҡ тәьҫир (һүҙҙәге). *Һүҙенең йоғоносо юҡ.*

**ЙОҒОНОСЛО** *с.* Аңға, күңелгә ярашлы, аңға һеңгән. *[Юлдыбикә:] Ауыҙым һалыҡлы, һүҙем йоғоносло булғанға бөтә халыҡ ярата.* Т. Хәйбуллин.

**ЙОҒОНОСҺОҘ** *с.* Аңға, күңелгә ятышһыҙ, аңға һеңмәгән. *Йоғоносһоҙ һүҙ.*

**ЙОҒОНОУ** *к.* Ҡул менән тейеү; ҡағылыу, ороноу.— *Һорауһыҙ, кеше нәмәһенә йоғонмағыҙ.* Ғ. Минһажев. *Арыҫланбәк машинаһы янына уларҙың [малайҙарҙың] береһен дә ебәрмәй: «Йоғонма, танау аҫтың кипмәгән!» — ти.* Р. Низамов.

● *Яманға йоғонма, йоғонһаң йығылма.* Мәҡәл.

**ЙОҒОНТО** *и.* Кем йәки нимәнеңдер кем йәки нимәгәлер булған тәьҫире, шул тәьҫирҙең һөҙөмтәһе, шауҡымы. *Кире йоғонто. Ыңғай йоғонто.* ■ *Хәҙер йәштәрҙе һәр төрлө ят идеология йоғонтоһонан һаҡлау өсөн көрәш бара.* М. Тажи. *Тимербулат иртәнән алып кемгә барып, ҡайһылай итеп әйтергә белмәй йөрөгән мөһим уйын командирҙың йомшаҡ һүҙҙәре йоғонтоһо менән үҙенән-үҙе әйтеп ебәрҙе: — Командир ағай, мине лә отрядка яҙ.* Һ. Дәүләтшина.

**ЙОҒОНТОЛО** *с.* Йоғонтоһо булған, йоғонто яһарлыҡ. *Тәнкит яңы йәмғиәт төҙөү эшендә йоғонтоло ҡорал булып тора.* З. Нурғәлин.

**ЙОҒОНТОҺОҘ** *с.* Йоғонто яһай алмаған, йоғонто яһай алмаҫлыҡ. *Йоғонтоһоҙ һүҙ.*

**ЙОҒОУ** (йоҡ*≠*) *к.* **1.** Тейеп, һыланып, эҙ ҡалдырыу; буялыу, яғылыу. *Уның [старшинаның] итектәре лә, гимнастерка төймәләре лә һәр саҡ ялтырап тора. Әйтерһең дә, башкаларҙыҡына тейгән кер уныҡына бер ҙә йоҡмай.* Н. Мусин. / *күсм.* Үҙләшеп йәбешеү. *Бәләкәй кәүҙәле булғанға мине «Катюшка» тип атанылар. Шул ҡушамат миңә йоғоп ҡалды.* «Башҡортостан ҡыҙы», 1974, № 2.

**2.** Берәүҙән берәүгә күсеү (ауырыуға ҡарата). *Атаһы ла нервный булған уның, бәлки шунан йоғоп ҡалғандыр.* С. Агиш.

**3.** *күсм.* Файҙалы булып, һиҙелерлек булып үҙләшеү; һеңеү. *«Был шоколад тигәндәре йөрәккә ятһа ла, бер ҙә эскә йоҡмай икән. Эх, ҡорһаҡ тултырып картуф ашарға ине»,— ти [егеттәр].* Ғ. Әмири. / Күңел биреп үҙләшеү; ылығыу. *Бәлки, [Муллағәле] баҫыла төшөп, йортҡа йоға башлар, хужалыҡҡа ла эҫенеп китер.* Ф. Иҫәнғолов.

**4.** *күсм.* Тәьҫирле булыу; кереү. *Ата һүҙен тотмаған, эсә һүҙе йоҡмаған яуға сабыр ир булмаҫ* (Ҡобайырҙан).

**5.** *күсм.* Өлөш булып эләгеү; тейеү. *Элекке заманда ҡатын-ҡыҙға уҡыу йоҡмаған ул.* М. Тажи.

**6.** *диал.* Һуғылыу. *Шәмсиә ханым .. өҫтәл яғынан аш яғына йүгергеләп тора. Табын тирәһенә һирәк йоға.* Д. Юлтый.

♦ **Кесе телгә лә йоҡмау** бик эҙ булыу. *Биргән ашы кесе телгә лә йоҡманы.* **Ҡулға ла**

йоҡмау һиҙелмәй ҙә ҡалыу, тиҙ бөтөү. *Кискә тиклем Фәхри ағайҙың сабынлығы ҡулға ла йоҡмай ҡала ул.* Ә. Чаныш. **Теле телгә йоҡмай** *ҡар.* тел 2. **Теш тешкә йоҡмау** *шул уҡ* **теш тешкә теймәү** (*ҡар.* теш[1]).

● *Аҡҡа ҡара тиҙ йоға.* Мәҡәл. *Ата малы улға йоҡмаç, инә малы ҡыҙға йоҡмаç.* Мәҡәл. *Ҡаҙандың ҡоромо, кешенең ҡылығы йоға.* Әйтем. *Яманға яҡын барһаң, бәләһе йоғор.* Әйтем.

**ЙОҒОШ** *и.* **1.** Аҙыҡтың файҙа биреше, туҡлығы. *Ҡурпының малға йоғошо булмай.*

**2.** *күсм. ҡар.* **йоғонос.**

**ЙОҒОШЛАНЫУ** *ҡ.* Йоғошло ауырыу менән зарарланыу. *Ангина менән йоғошланыу.*

**ЙОҒОШЛО** *с.* **1.** Берәүҙән берәүгә күсеүсән (ауырыуға ҡарата). *Йоғошло ауырыу.*

**2.** *күсм. ҡар.* **йоғоносло.**

**3.** *һөйл.* Туҡлыҡ бирерлек; туҡлыҡлы. *Йоғошло аҙыҡ.*

**ЙОҒОШОУ** *ҡ.* Кешегә тартылып, эргәһендә уралыу; һырлығыу. *[Мулла:] Анау Зәйнәп камсамулдарға йоғошоп бара.* И. Ғиззәтуллин.

**ЙОҒОШҺОҘ** *с.* **1.** Берәүҙән берәүгә күсмәй, йоҡмай торған (ауырыуға ҡарата).

**2.** *күсм. ҡар.* **йоғоносһоҙ.**

**3.** *һөйл.* Туҡлығы булмаған, туҡлыҡһыҙ (аҙыҡҡа ҡарата). *Йоғошһоҙ бесән.*

**ЙОҒОШҺОҘЛАНДЫРЫЛЫУ** *ҡ. төш. ҡар.* **йоғошһоҙландырыу.**

**ЙОҒОШҺОҘЛАНДЫРЫУ** *ҡ.* Йоғошһоҙ (1 мәғ.) итеү.

**ЙОҒОШҺОҘЛАНЫУ** *ҡ.* Зарарлы бактерияларҙан таҙарыу. *Һыу йоғошһоҙлана.*

**ЙОД** [*рус.* ⟨ *гр.*] *и.* **1.** Химик элемент, ҡара буҙ төҫтәге кристаллик матдә.

**2.** Шул матдәнең спирттағы иретмәһе (медицинала ҡулланыла). *Йод һөртөү.*

**ЙОДЛЫ** *с.* Йод ҡатнаш. *Йодлы водород. Йодлы көмөш. Йодлы тоҙ.*

**ЙОДОФО́РМ** [*рус.*] *и.* Йод препараты — бик көслө еҫле һары кристалл порошок медицинала йоғошһоҙландырыу сараһы булараҡ ҡулланыла.

**ЙОҘАҠ** *и.* **1.** Нимәнелер бикләү өсөн эшләнгән асҡыслы ҡоролма; бик. *Тышҡы йоҙаҡ. Иске йоҙаҡ. Аҫмалы йоҙаҡ. Бығау йоҙаҡ. Ишек йоҙағы. Йоҙаҡ асҡысы. Йоҙаҡ теле. Йоҙаҡ менән бикләү.* ■ *Хасбулат олатай һандыҡтың бик күптән бирле тороп тутыҡҡан йоҙағына кәрәсин тамыҙа-тамыҙа көскә асты.* З. Биишева.

**2.** *хәрби* Ҡайһы бер атыу ҡоралында атып ебәреү өсөн эшләнгән ҡулайлама. *Пушканың йоҙағы шартлап ябылды.* «Ағиҙел», 1969, № 2.

**3.** Ағас конструкцияларҙа бүрәнә, бурса һ. б. өлөштәрҙе ҡаптырып, эләктереп ҡуйыу ысулы. *Өй бураһының йоҙағы.*

♦ **Ете ҡат йоҙаҡ аҫтында** бик ныҡ, ышаныслы итеп йәшерелгән. *[Ҡарттың] бөтә донъяһы ете ҡат йоҙаҡ аҫтында.* А. Ғирфанов.

**ЙОҘАҠЛАНЫУ** *ҡ. төш. ҡар.* **йоҙаҡлау** 1. *Ишек йоҙаҡланған.*

**ЙОҘАҠЛАУ** *ҡ.* **1.** Йоҙаҡ (1 мәғ.) менән бикләү, йоҙаҡ һалыу. *Йоҙаҡлап алыу. Йоҙаҡлап китеү. Йоҙаҡлап тотоу.* ■ *Магазинды ябып йоҙаҡланылар ҙа пломба һуҡтылар.* С. Агиш. *Ғөлйөҙөм балаларҙы өҫтөнән йоҙаҡлап китте.* Һ. Дәүләтшина.

**2.** Йоҙаҡ (3 мәғ.) ҡуйыу; йоҙаҡлы итеү. *Йоҙаҡлап бурау. Йоҙаҡлап эшләү.*

**ЙОҘАҠЛЫ** *с.* **1.** Йоҙаҡ (1 мәғ.) менән бикләнгән. *Йоҙаҡлы ишек. Йоҙаҡлы өй.*

**2.** *күсм.* Кешенән йәшерен; бикле. *[Ғәлимдең] йөҙө лә, күңеле лә йоҙаҡлы.* А. Таһиров.

**ЙОҘАҠҺЫҘ** *с.* Йоҙаҡ (1 мәғ.) менән бикләнмәгән, йоҙаҡ һалынмаған. *Йоҙаҡһыҙ ишек. Келәт йоҙаҡһыҙ.*

**ЙОҘРОҠ** *и.* Бармаҡтары усҡа ҡыҫып йомолған ҡул осо. *Йоҙроҡ күрһәтеү. Йоҙроҡ күтәреү. Йоҙроҡ менән һуғыу. Йоҙроҡ һуғып ҡысҡырыу.* ■ *Йәнәҙаҡ ҡарт йоҙроҡ төйөп, Ишкелдегә йомолоп бара.* М. Тажи.

♦ **Йоҙроҡ хәтле** үҙ самаһынан ҙур булған бәләкәй нәмәгә әйтелә. *Ҡурылдайҙы йоҙроҡ хәтле булып сығып тора.* З. Биишева. **Йоҙроҡ хәтле генә** ҙур нәмәне бик бәләкәй итеп күрһәтеү өсөн әйтелә. *Йоҙроҡ хәтле генә бер өйҙөң һалам һымаҡ ҡына мөрйәһенән ҡыл кеүек кенә төтөн сығып тора, ти* (Әкиәттән). **Йығылғанға йоҙроҡ** берәүгә өҫтө-өҫтөнә бәлә килгәндә әйтелә. *[Ғафури:] Йығылғанға йоҙроҡ шул булалыр инде: Заһретдин ҡартҡа бәхетһеҙлек төрлө яҡлап килә.* С. Ҡудаш.

**ЙОҘРОҠЛАНЫУ** *ҡ. төш. ҡар.* **йоҙроҡлау** 1. *Йоҙроҡланған ҡул.*

**ЙОҘРОҠЛАУ** *ҡ.* **1.** Йоҙроҡто йомарлау, йоҙроҡто йомоу. *Ҡулды йоҙроҡлау. Йоҙроҡлап һуғыу.*

**2.** Йоҙроҡ менән туҡмау. *Малайҙар һорашып-нитеп тормай, [Камалды] йоҙроҡлай башланы.* Ә. Бикчәнтәев.

**ЙОҘРОҠЛАШЫУ** *ҡ.* Йоҙроҡ менән һуғышыу. *Артист халҡы ғасаби була. Әҙ генә нәмәгә лә талаша, һүгешә, йоҙроҡлашыуға барып етә.* Д. Юлтый.

**ЙОЗАФ** [*ғәр.*] *с. иҫк. кит.* Үлсәмәй, уйламай әйтелгән; мәғәнәһеҙ. *Тел төбөмдә бер һүҙем бар, һүҙ төбөндә бик лайыҡ. Бер йозаф һүҙ булһа ла гәр, бер изаһһыҙ үтмәйек.* Ш. Бабич.

**ЙОҠ** *и.* **1.** Йоғоп, яғылып ҡалған нәмә. *Һоло буҡҡаһынан йоҡ күп була.* Т. Морат.

**2.** *күсм.* Файҙа йәки дан өҫтәгән, килешкән нәмә. *Илең өсөн ике үлмәҫ ир булһаң, күкрәк һуғып, тел ҡуҙғатыу йоҡ түгел.* Й. Солтанов.

**ЙОҠА**[1] *с.* **1.** Ике яҡ йөҙ өҫтө сағыштырмаса яҡын; ҡалынлығы ҙур түгел; *киреһе* ҡалын. *Йоҡа боҙ. Йоҡа ирен. Йоҡа ҡағыҙ. Йоҡа ҡар. Йоҡа таҡта. Йоҡа юрған. // Йоҡа юныу.* ■ *Ул [ҡыҙ] йоҡа ебәк күлдәк кейгән, аяғында — ебәк ойоҡ, аҡ нәфис туфли.* Д. Юлтый.

**2.** Йылы тотоу яғынан насар булған, һырылмаған, еңел (кейемгә ҡарата). *Йоҡа пальто. // Йоҡа кейенеү.*

**3.** Һирәк булып үҫкән; ҡуйы түгел. *Йоҡа сәсле. Бесәне йоҡа сабынлыҡ. /* Үтә күренеп торған; ҡуйы түгел. *Аҡселән буйҙарын йоҡа алһыу нурға маныл, .. таң атып килә ине.* Б. Бикбай. *[Марусяның] күҙ төптәрен йоҡа ғына күләгә ҡаплаған.* Һ. Дәүләтшина.

**4.** Ит, май ҡунмаған, итләс түгел; ҡаҡса.

*[Фәүзиә] һонтор булғанға күрә кәүҙәгә йоҡа.* Т. Килмөхәмәтов.

**5.** *күсм.* Етерлек дәрәжәнән аҙ; наҡыҫ. *Һый йоҡараҡ булды.* М. Тажи.

♦ **Елкәһе йоҡа** *йәки* **йоҡа елкә** (*кар.* **елкә**). **Тиреһе йоҡа** *йәки* **йоҡа тиреле** (*кар.* **тире** [1]). **Кеҫәһе йоҡа** аҡсаһы юҡ; ярлы.

● *Ятыу-тороу байҙарса, өҫтә кейем йоҡараҡ.* Әйтем.

**ЙОҠА** [2] *и. диал. кар.* **көлсә** 1.

**ЙОҠАҠ** *с. диал. кар.* **йоҡа** [1].

**ЙОҠАЛАУ** *к. диал.* Йоҡартыу.

**ЙОҠАЛТАЙ** *с. диал.* Ҡаҡса.

**ЙОҠАН** *и.* Нәҫел-ырыуҙың тамыры, тоҡомо, заты; йыуата.

♦ **Йоҡаны ҡороһон** ҡарғағанда әйтелә.

**ЙОҠАРТТЫРЫУ** *к. йөкм. кар.* **йоҡартыу.**

**ЙОҠАРТЫЛЫУ** *к. төш. кар.* **йоҡартыу.**

**ЙОҠАРТЫУ** *к.* Йоҡа (1 мәғ.) итеү, йоҡаға әйләндереү. *Тактаны йышып йоҡартыу.*

**ЙОҠАРЫУ** *к.* **1.** Ҡалындан йоҡаға әйләнеү. *Ҡар йоҡарған.* ■ *Йомағол ҡырып йыуылған, йоҡарып бөткән иҫке иҙәнде һыға баҫып, ишеккә йүнәлде.* Н. Мусин.

**2.** Ҡуйынан һирәккә әйләнеү. *Сәсе йоҡарған кеше.* / Шыйығыраҡҡа, һирәккә әйләнеү. *Көнсығышта болот йоҡарған. Моғайын, аяҙырға итәлер.* Ф. Иҫәнғолов.

**3.** Һимеҙҙән ябыҡҡа әйләнеү. *[Дәүләтбайҙың] төҙ, ныҡ кәүҙәһе бөкрәйеп, йоҡарып киткән.* Ә. Вахитов.

**ЙОҠАСАЙ** *и. диал. кар.* **сабаҡ** [1].

**ЙОҠЛАТЫУ** *к.* **1.** Йоҡоға ебәреү, йоҡоға талдырыу. *Кемдер [баланы] әүелдәп бәүетеп, йоҡлатырға кереште.* Һ. Дәүләтшина. *Һауанан кәүҙәгә шаулап яуа тындыра һәм йоҡлата торған дауа.* Ш. Бабич.

**2.** Йоҡларға ирек биреү. *Бер белорус крәҫтиәне беҙҙе ашатты, һарайында йоҡлатты.* Д. Юлтый.

**ЙОҠЛАУ** *к.* **1.** Йоҡо хәлендә булыу. *Ҡаты йоҡлау. Бер ни белмәй йоҡлау. Ғырылдап йоҡлау. Иҙрәп йоҡлау. Йоҡлай алмай ятыу. Йоҡларға һалыу.* ■ *Өмөтҡужа йоҡлар-йоҡламаҫ булып, ыңғырашып ята.* Ғ. Дәүләтшин. *Йөҙ илле лә керпек күҙен йомоп, йоҡлаймы икән Фатимам төш күреп* (Халыҡ йырынан).

**2.** *күсм.* Эшкә һүлпән, вайымһыҙ булыу. *Йоҡлап йөрөү.*

**ЙОҠО** [1] *и.* Билдәле бер ваҡыт араһында ҡабатланып торған һәм аң эшмәкәрлегенең тулыһынса йәки өлөшләтә туҡталып тороуһы менән бәйләнешле физиологик яҡтан тыныслыҡ, организмдың ял итеү хәле. *Иртәнге йоҡо. Татлы йоҡо. Тыныс йоҡо. Йоҡо белмәү. Йоҡо күрмәү. Йоҡо бөтөү. Йоҡо ҡалыу. Йоҡо төҫө күрмәү. Йоҡо туйҙырыу. Күҙҙе йоҡо алмау. Күҙгә йоҡо килмәү. Йоҡоға баш була алмау. Йоҡоға иҫереү. Йоҡоға китеү. Йоҡоға сумыу. Йоҡоға һалышыу. Йоҡонан тороу. Йоҡонан уяныу. Йоҡоно бүлеү.* ■ *Йылы өйҙә сәй эсеп, тамаҡты туйҙырып алғас, йоҡо баҫа башланы.* Ғ. Ғүмәр. *Әбей йоҡо аралаш көлөп ебәрҙе лә уянып китте.* М. Тажи. *Әлүкәйҙең ашы аш түгел, йоҡоһо йоҡо түгел: гел ҡатынын уйлай, ти* (Әкиәттән). *Йоҡлар йоҡоһон йоҡламай, тыуған илен иҫкә алып* (Халыҡ йырынан). **Ғәфләт йоҡоһо 1)** иҫһеҙ, ҡаты йоҡо. *Төндә урмандан юлбаҫарҙар килеп сыға. Шул ғәфләт йоҡоһолор инде, былар бер нәмә тоймай, ә юлбаҫарҙар Аҡназарҙың .. аттарын ала ла урманға ҡасалар* (Әкиәттән); 2) *күсм.* вайымһыҙлыҡ, ғәмһеҙлек, аңһыҙлыҡ. *Ғәфләт йоҡоһо баҫҡындыр инде, был тиклем ятмаҫ инегеҙ.* В. Исхаҡов. **Йоҡо бүлмәһе** йоҡлау өсөн билдәләнгән махсус бүлмә. **Йоҡо ҡасыу** (*йәки* **осоу, асылыу**) йоҡоға булған теләк бөтөү. **[Күҙгә] йоҡо төйөлөү** йоҡо килеү. *Ул [Ҡотлогилде] йоҡо төйөлгән күҙҙәрен ыуалай, шунан йоҡоһо осҡандай була.* Ж. Кейекбаев. **Ҡош йоҡоһо** аҙ йоҡлаған кешегә әйтелә. **Сөсө йоҡо** тәүге йоҡо. *Өсөнсө көнөнә, кәләше сөсө йоҡоға киткәс, Бейалтмыш тышҡа сығып, эсе итеп һыҙғырып ебәрә, ти* (Әкиәттән).

♦ **Йоҡо ауырыуы** тропик Африкала биҙгәк тотоу, йыш баш ауыртыу, психика боҙолоу, ныҡ йоҡо килеү менән үтә торған йоғошло ауырыу. **Йоҡо баҫыу** йоҡо килеп, ауырайтыу. *[Сабира апай] бик тә йоҡо баҫып барғас, саҡ ҡына күҙемде алдап алайым тип, урынға барып ятты.* Ә. Вахитов. **Йоҡо миҫкәһе** (*йәки* **сүлмәге**) күп йоҡларға яратҡан кеше. *Төшкә саҡлы йоҡлап тик ята. Йоҡо сүлмәге ул Миңлеғата.* С. Муллабаев. **Йоҡо тамыры** *шул уҡ* **барлау тамыры** (*кар.* **тамыр**). **Йоҡо һимертеү** оҙаҡ итеп йоҡлау. *[Азат:] Ул асығып ҡайтҡан, һинең һымаҡ йоҡо һимертмәгән.* Ә. Бикчәнтәев. **Тыныс йоҡо** йоҡо алдынан әйтелә торған теләк һүҙе.

**ЙОҠО** [2] *и. диал.* **1.** Йоҡолоҡ.

**2.** Йөлөн.

**ЙОҠОЛО** *с.* Бөтөнләй уянмаған йәки йоҡларға теләгән кешенекенә хас, йоҡо баҫҡан. *Йоҡоло күҙ. Йоҡоло тауыш.*

**ЙОҠОЛОҠ** *и.* Малдың ҡарынына йәбешеп торған бер биҙ.

**ЙОҠОМҺОРАТЫУ** *к.* **1.** Йоҡоно килтереү. *Ҡымыҙ йоҡомһоратып алып китте.*

**2.** *эйһ. ф. кар.* **йоҡомһорау.** *Йылы өйгә ингәс, йоҡомһоратты ла китте.*

**ЙОҠОМҺОРАУ** *к.* Йоҡо килә башлау. *Плащына ураныи, арбала дер-дер ҡалтыраныи, йоҡомһорап ултырған Сәғиҙәне йәлләп алды [карт].* М. Тажи. *[Бабай] ял итергә ултырған, ултыра торғас, йоҡомһорап киткән* (Әкиәттән).

**ЙОҠОСАН** *с. диал.* Йоҡосо.

**ЙОҠОСО** *с.* Йоҡо яратҡан, йоҡоға әүәҫ. *Йоҡо ярата йоҡосо кеше* С. Муллабаев. *[Гөлдәр — Булатҡа:] Аһ-аһ, һаман йоҡлай, йоҡосо!* К. Кинйәбулатова.

● *Ялҡауҙың эсе, йоҡосоноң башы ауырта.* Әйтем.

**ЙОҠОСОЛ** *с. диал.* Йоҡосо.

**ЙОҠОҺОҘ** *с.* Йоҡламай үткәргән. *Йоҡоһоҙ төндәр.* / Йоҡоға бирелмәгән, йоҡо хәлендә булмаған. *Төн урталарында .. йылға ярҙарына һыймай, ташып китте. Ер емерелгәндәй, гөр килде һауа. Төнгө йоҡоһоҙ Ғариф карт: „Әһә, ҡыуға һынды“,— тине.* Б. Бикбай.

**ЙОҠТОРОУ** *к.* **1.** Тейҙереп эҙ ҡалдыртыу, буялтыу, яғылтыу. *Ҡулға ҡором йоҡтороу.*

**2.** Ауырыу эләктереү. *Грипп йоҡтороу.* ■ *[Бабай] юлда тиф йоҡтороп, вафат булып ҡалды.* М. Тажи.

**ЙОҠТОРТОУ** *к. йөкм. ҡар.* **йоҡтороу.**

**ЙОҠҺОҘ** *с. һөйл.* Мал йоҡмаған, байый алмаған. *Йоҡһоҙ кеше.*

**ЙОЛА** *и.* Быуындан-быуынға килеп, халыҡ араһында ҡағиҙәгә әйләнеп киткән эш-ҡылыҡ тәртибе; ғөрөф-ғәҙәт. *Дини йола. Мәжлес йолаһы. Туй йолаһы.* ■ *[Яҙ] ваҡытында элек киндер туҡмарға сыға торған йола бар ине.* К. Мәргән. *Тыуып үҫкән илде-ерҙе һаҡлау — ата-олатайҙар йолаһы.* Ҡ. Даян. *Халыҡта, яҙ етеп, торналар килгән саҡта, атлап китә алмай ултырған баланы көн сыуағына сығарып ултыртыу йолаһы бар.* «Совет Башҡортостаны», 1971, 30 апрель.

**ЙОЛАСЫ** *и.* Йоланы яҡшы белеп, ныҡ тотҡан кеше.

**ЙОЛҠАР** *и. диал. ҡар.* **йолҡҡос** 2.

**ЙОЛҠҠОЛАНЫУ** *к. төш. ҡар.* **йолҡҡолау.** *Халыҡ араһында ҡулдан-ҡулға йолҡҡоланып йөрөй торғас, ҡарсығаның ҡәкре суҡышы ғына тороп ҡалған, ти* (Әкиәттән).

**ЙОЛҠҠОЛАТЫУ** *к. йөкм. ҡар.* **йолҡҡолау** 1.

**ЙОЛҠҠОЛАУ** *к.* **1.** Тартып өҙөү, күпләп йолҡоу. *Үләнде йолҡҡолау.* ■ *Таҙҙың бисәһе: „Ҡуҙыйкүрпәс ҡайҙа?! Әйт, йәнеңде алмаҫ борон!" — тип турғайҙың йөнөн йолҡҡолай башланы, ти.* „Ҡуҙыйкүрпәс менән Маянһылыу". / Тотоп, тартып ойпалау. *Балалар, урын өҫтөндә уйнап, ҡаралдыны йолҡҡолап бөтә.*

**2.** *күсм.* Төрлө ерҙән өлөш-өлөш итеп айырып алыу. *Ул, шиғырҙың айырым-айырым строфаларын йолҡҡолап алып, бөтөнләй насар шиғыр итеп күрһәтергә тырышҡан.* Р. Ниғмәти.

**3.** *күсм. һөйл.* Кемдеңдер аҡсаһын, малын әҙләп алыу, йолҡоу.

**ЙОЛҠҠОС** *и.* **1.** (*йәки* **етен йолҡҡос**) Етен йолҡа торған машина.

**2.** *күсм.* Оят, намыҫты белмәй, һәр нәмәне үҙ файҙаһына тартыусы кеше; өҙгөс. // *Йолҡҡос кеше.* ■ *Намыҫһыҙ, бысраҡ, йолҡҡос, тип, бында ябылһа ишек, унда Буҡәншин ағаңа әҙер баш һыйыр тишек.* С. Кулибай.

♦ **Йән йолҡҡос** йәнде үртәгес, йән ашағыс.

**ЙОЛҠҠОСЛАУ** *к. ҡар.* **йолҡҡолау.** *Йолҡҡослап бөтөрөү.*

**ЙОЛҠОЛОУ** *к. төш. ҡар.* **йолҡоу.** *Йолҡолған үлән.*

**ЙОЛҠОНОУ** *к. диал. ҡар.* **өҙгөләнеү** 2.

**ЙОЛҠОУ** *к.* **1.** Төбө, тамыры менән аҡтара тартыу. *Йәнйегет йәшкелтерәк бойҙайҙы йолҡоп, көлтә бауҙары яһай.* Ғ. Дәүләтшин. *[Ҡыҙ — егеткә:] Дейеүҙең бөтә көсө һаҡалында. Ана шул һаҡалын йолҡоп ал* (Әкиәттән). / Өҙөп-өҙөп йыйыу. *Етен йолҡоу. Киндер йолҡоу. Мүк йолҡоу.*

**2.** Өҙөп-өҙөп сәс, йөндән таҙартыу. *Ҡаш йолҡоу. Тауыҡ йолҡоу.* ■ *[Ҡыҙрас:] Бына, йөҙ ҙә ете йәшлек ябалаҡ тотҡайным, шуны йолҡоп ултырған баш* (Әкиәттән).

**3.** *күсм. һөйл.* Тейешле-тейешһеҙ юлдар менән үҙеңә алыу, үҙләштереү (аҡса, малды); эләктереү. *Ҡайҙан булдыра ала, шунан йолҡоу яғын ҡарау.*

♦ **Сәс йолҡоу** *ҡар.* **сәс. Тамырынан йолҡоу** *ҡар.* **тамыр.**

**ЙОЛҠОШ** *с.* Тышҡы күренеше алама, ярлы. *[Имай:] Ситтә эшләп йөрөһәң дә, бер ҙә арттан ереҥ юҡ икән, ҡустым. Һаман да шул йолҡош икәнһең.* Һ. Дәүләтшина. *Бәләкәй генә, йолҡош ҡына Ҡотой ауылы һәр нәмәһе етеш булған үҙәк бер ауылға әйләнеп китә.* Ғ. Дәүләтшин.

**ЙОЛЛОҠ** *и.* Аяҡ кейеменең баш күне сит-ситенән айырылып сыҡҡанда уратып һалына торған ямау. *Йоллоҡ һылыу.* **Йоллоҡ баш** итектең баш өлөшөн яңыртып һалған ҙур ямау.

**ЙОЛЛОҠЛАНЫУ** *к. төш. ҡар.* **йоллоҡлау.** *Йоллоҡланған итек.*

**ЙОЛЛОҠЛАУ** *к.* Йоллоҡ һалып ямау. *Итекте йоллоҡлау.*

**ЙОЛМАҠ** *и. диал. ҡар.* **йолон** [1].

**ЙОЛМАЛАУ** *к. диал.* Йолҡҡолау.

**ЙОЛОМ** *и. тар.* Ғәйепте баҫырыу йәки кешене ҡотҡарыу өсөн бирелгән аҡса, мал.

**ЙОЛОН** [1] *и.* Күн өсөн йөнө ейетелгән тире; сей күн.

**ЙОЛОН** [2] *и. диал.* Йөлөн.

**ЙОЛОНОУ** *к.* **1.** *төш. ҡар.* **йолоу** [1]. *Кәримәкәй һылыу теҙ сүгеп, үбәйем мин һинең ҡулыңды: үлем тырнағынан кешелек һинең ҡулың менән йолонды.* Й. Солтанов.

**2.** *ҡайт. ҡар.* **йолоу** [1] 2, 3. *Бәләнән йолоноу.*

**ЙОЛОТОУ** *к.* **1.** Ейетеп ҡойолтоу (сәсте, йөндө).

**2.** Тере көйө сейләндереп боҙолдороу. *Яраны йолотоу.*

**ЙОЛОУ** [1] *к.* **1.** Төбө, тамыры менән һурыу; йолҡоу (сәсте).

**2.** Һөйрәп сығарыу, тартып алыу. *Һыуҙан йолоп алыу.* ■ *— Ат йылыуға тура килеп, санаһы менән ҡуша гөмбөрләп төшөп киткән. Сәхәү мине саҡ йолоп алып ҡалған.* Й. Солтанов.

**3.** *күсм.* Ауыр хәлдән аралап ҡотҡарыу; әрсәләү. *Бәләнән йолоу. Дошмандан йолоу. Үлемдән йолоу. Һәләкәттән йолоу.* ■ *— Әсәйең һине аслыҡ тырнағынан йолоу өсөн ҡәҙерләп кейә торған ҡулдәктәрен бер нисә ҡаҙаҡ онға алмашҡан.* «Ағиҙел», 1965, № 1.

♦ **Ғәйепте** (*йәки* **яҙыҡты**) **йолоу** ғәйепте йәки яҙыҡты юйыу. *[Мораҙым:] Тәңре өйө оло кәғбәне ете әйләнеп яҙығымды йоламын* (Ҡобайырҙан).

**ЙОЛОУ** [2] *к.* **1.** Ейеп ҡойолоу (сәс, йөнгә ҡарата). *Йолоп бөтөү. Йөнө йологан тире.*

**2.** *һөйл.* Сейләнеп боҙолоу (тәнгә ҡарата). *Яраһы бәйле йөрөп, йолоп киткән.*

**ЙОЛПОС** *и. диал.* Һелкеүес.

**ЙОЛПОСЛАНЫУ** *к. диал.* Йолпос һымаҡ булыу, йолпосҡа оҡшау. *Елкәндәр кисәге кеүек кирелеп, елгә тарһылдамай, йолпосланып ҡатҡан да, һалмаҡ ҡына ел менән кәмәне этә.* А. Таһиров.

**ЙОМА** [*ғәр.*] *и.* **1.** Аҙнаның бишенсе көнө. *Йома арты. // Йома көн.* ■ *Йомаға ҡаршы ямғыр яуһа, аҙна буйы яуа* (Һынамыштан).

**2.** (*йәки* **йома намаҙы**) Аҙнаның бишенсе көнөндә уҡыла торған оло намаҙ. *Йомаға барыу. Йоманан сығыу.*

**3.** *һөйл.* Ете көн араһы; аҙна. *Минең кулда алты һум акса, бер йомаға етерлек аҙык бар ине.* Т. Йәнәби. *Хәсән Өфөлә бер йома буйы торҙо.* Т. Байышев.

♦ **Кесе йома** *диал.* аҙнаның дүртенсе көнө; кесаҙна. **Оло йома** *диал.* аҙнаның бишенсе көнө. **Урыҫ йомаһы** *диал.* йәкшәмбе.

**ЙОМАҒАЙ** *с. диал.* Йомаҡай.

**ЙОМАДИӘЛАХЫР** [*ғәр.*] *и.* Ай календарының алтынсы айы (*ҡар.* **календарь**).

**ЙОМАДИӘЛӘҮҮӘЛ** [*ғәр.*] *и.* Ай календарының бишенсе айы (*ҡар.* **календарь**).

**ЙОМАҠ** *и.* Төп мәғәнәһен уйлап табыу өсөн нимәнелер кинәйә менән йәки һүҙ уйнатып, һүрәтләп әйткән һүҙ (мәҫ. «Ялт-йолт итә, ялмап йота» — салғы; «Ана бара — эҙе юҡ» — кәмә). *Йомаҡ сисеү.* ■ *Йомаҡ әйткән һүҙ йыйыр, йөн йомғаҡтай йомарлап, һүҙ эсенә уй йомор* (Ҡобайырҙан). **Йомаҡ ҡойоу** йомаҡ әйтеү.

**ЙОМАҠАЙ** *с.* Ярамһаҡланып, сөсө тел менән күңелде арбаған; юха. *Йомаҡай кеше. Йомаҡай булыу.*

**ЙОМАҠАЙЛАНЫУ** *ҡ.* Йомаҡайға әйләнеү; юхаланыу. *[Әхмәтов ҡыҙы — Барсакова хаҡында:] Бер күргәндә — ал да гөл, юхалана, йомаҡайлана, икенсе күргәндә — тағы танауын күтәрә.* А. Таһиров

**ЙОМАҠАЙЛАУ** *ҡ. ҡар.* **йомалау.**

**ЙОМАЛАҠ** *и. диал.* Йомарлам.

**ЙОМАЛАҠЛАУ** *ҡ. диал. ҡар.* **йомарлау 1.**

**ЙОМАЛАП** *р. диал.* Аҙналап. *Йомалап ҡунаҡ булыу.*

**ЙОМАЛАУ** *ҡ.* Сөсө тел, татлы һүҙ менән йыуыу; юхалау. *Усман ҡарт башта йомалап, унан асыуланып, атты Ғәфәргә бирмәҫкә тырышты.* А. Таһиров.

**ЙОМАРЛАҠ** *и. диал.* **1.** Йомарлам. *Ҡар йомарлағы.*

**2.** *ҡар.* **йомғаҡ** 1, 2. *Еп йомарлағы.*

**3.** *ҡар.* **көнйәлә** 1. *Бер йомарлаҡ йөн.*

**ЙОМАРЛАМ** *и.* Билдәле бер ҙурлыҡта йомарланған нәмә. *Бер йомарлам май. Бер йомарлам балсыҡ.* // *Йомарлам сыр.*

**ЙОМАРЛАНЫУ** *ҡ.* **1.** *төш. ҡар.* **йомарлау** 1—3. *Йомарланған май. Йомарланған терпе. Йомарланып ятҡан йылан.* ■ *[Ғиндуштың да] йөҙрөгө минеке һымаҡ йомарланған.* Ф. Исәнғолов. *[Һалдаткалар] камзул, кәзәкей кеҫәләрендә йөрөп, йомарланып, керләнеп бөткән ҡағыҙҙарын сығарып, Диләкәйгә һуҙалар.* Һ. Дәүләтшина.

**2.** *ҡар.* **тумалыу** 1. *Сәскәгә йомарланыу. Йомарланған алма.*

**ЙОМАРЛАУ** *ҡ.* **1.** Йомро, тумалаҡ хәлгә килтереү. *Балсыҡты йомарлау. Ҡарҙы йомарлау.* ■ *Аҡ тәрилкә өҫтөндә йомарланған май ғына* (Халыҡ йырынан).

**2.** Нык ҡыҫыу (йоҙроҡто). *Бер-икеһе йоҙроҡтарын йомарлап, урындарынан торҙо.* С. Агиш. / Бөрөп алып ҡымтыу. *Уҫҡа йомарлау.* ■ *Гөльямал .. бәләкәй генә мендәрҙе ҡуйынына йомарлап алды.* Я. Хамматов.

**3.** Теләһә нисек бөкләп ойпалау. *Ҡағыҙҙы йомарлау.* ■ *[Хаят] дәфтәренең ситтәрен йомарлап, кәләм осон ауыҙына ҡабып ултыра.* Һ. Дәүләтшина. *[Ямал:] Бына ошо тоҡтарҙы ғына алып ҡарайыҡ: былтыр көҙ, кабат кәрәкмәҫтәй күреп, ҡайҙа етте шунда йомарлап һалып ҡуйғандар.* М. Тажи.

**4.** Йомғаҡ итеп урау; йомғаҡлау. *Йомғаҡ та йомғаҡ ебәкте йомарлаһағыҙ тағы ни була* (Сеңләүҙән).

**ЙОМАРСАЙ** *и.* Төйөлгән тарыға һөт ҡушып йомарлаған ашамлыҡ.

● *Йортта ҡалған йомарсай менән туй итә.* Мәҡәл.

**ЙОМАРСАҠ** *и.* **1.** Әүәләп яһалған бәләкәй йомро нәмә. *Ҡарҙан йомарсаҡтар яһау.*

**2.** *диал.* Йомарсай.

**ЙОМАРСАҠЛАНЫУ** *и.* Йомарсаҡ (1 мәғ.) хәлгә килеү. *Торбаларҙан сыҡҡан төтөн көҙгө иртәлә йомарсаҡланып, тауҙар яғына ҡарай аға.* Ш. Янбаев.

**ЙОМАРСАҠЛАУ** *ҡ.* Йомар саҡ (1 мәғ.) хәлгә килтереү, йомро итеү. *Балсыҡты әүәләп, йомарсаҡлау.*

**ЙОМАРТ** *с.* **1.** Бар нәмәһен кеше менән бүлешкән, нәмәһен кешенән ҡыҙғанмаған; *киреһе* һаран. *Йомарт кеше./ күсм.* Нимәгәлер әүәҫ, ихлас. *Һүҙгә йомарт.* ■ *Йырға йомарт йомаҡлы ҡарт — минең ерем.* Р. Назаров.

**2.** *күсм.* Нимәгәлер муллыҡ килтергән, ниҙелер күп биргән. *Йомарт ер. Йомарт нурҙар. Йомарт булыу.* // *Йомарт тотоноу.* ■ *Йомарт көҙҙә ал алмалар өҙөлөп төшөр.* Ғ. Әмири.

● *Аҡылы булған әйтмәй белгән, йомарт булған һорамай биргән.* Әйтем.

**ЙОМАРТЛАНЫУ** *ҡ.* **1.** Йомартлыҡ күрһәтеү. *[Заһит:] Ниңә һуң әле мин йомартланып, һиңә йөҙ илле һум бирергә булдым?* С. Мифтахов.

**2.** *күсм.* Нимәгәлер әүәҫләнеү, ихласланыу. *Хафиз ҡарт, бер-ике стакан бал эсеп алғас, һүҙгә йомартланып китте.* М. Тажи.

**ЙОМАРТЛЫҠ** *и.* Йомарт булған хәл. *Йомартлыҡ күрһәтеү. Йомартлығы көслө.* ■ *[Һаҙыйҙың] йомартлығы ла бар ине. Йомарт тигәс тә, баяғы, аксалатамы, игенләтәме, бурысҡа биреп тороу тиһәң, һис баш тартмаҫ, кире ҡаҡмаҫ, һүҙеңде аша атламаҫ ине.* С. Кулибай.

**ЙОМҒАҠ** *и.* **1.** Тумалаҡлап ураған еп. *Бер йомғаҡ йөн. Йомғаҡҡа урау. Йомғаҡты тағатыу.* **Йомғаҡ төбө** йомғаҡты башлап урай торған нәмә.

**2.** *күсм.* Буталсыҡ, сыуалсыҡ нәмә. *Мин шул көндәрҙәге хәтирәләр йомғағын сисә башланым.* С. Кулибай. **Йомғаҡ осо** 1) ураған етең тышҡы осо; 2) *күсм.* буталсыҡ, сыуалсыҡ эште сисә торған бер йәбешке.

**3.** Бер сама ҙурлыҡта итеп йомарланған нәмә; йомарлам. *Хәмдиә баҫым төбөнән бер йомғаҡ балсыҡ йомарлап алды.* Һ. Дәүләтшина. *Быларҙың бисәләре бер ашлау бутҡа бешереп, уртаһына бер йомғаҡ май һалып килтереп ултырта* (Әкиәттән).

**4.** *күсм.* Дөйөмләштереп иҫәпләнгән ниндәйҙер эштең, хеҙмәттең нәтижәһе; һөҙөмтә. *Айлыҡ эш йомғағы. Ярышҡа көн һайын йомғаҡ яһала.*

♦ **Йомғаҡ кеүек тәгәрләү** ниҙер бик етеҙ ҡуҙғалғанда әйтелә. *Азат йомғаҡ кеүек тәгәрләп карауаттан төштө.* З. Биишева.

**ЙОМҒАҠЛАНЫУ** *ҡ. төш. ҡар.* **йомғаҡлау.** *Йомғаҡланған еп. Йомғаҡланған май.*

**ЙОМҒАҠЛАУ** *ҡ.* **1.** Тумалаҡлап урау (епте). *Йомғаҡлаған бәйләр ебемде бәйләп кенә бөтһәм ни була* (Сеңләүҙән).

**2.** Билдәле ҙурлыҡта тумалаҡ итеп йомарлау. *Майҙы йомғаҡлау.* ■ *Бына .. тамам һағыҙлан-ған балсыҡты ҡул менән әүәләп, йомғаҡлай башланылар.* Ш. Янбаев.

**3.** *күсм.* Дөйөмләштереп һеҙөмтә сығарыу. *Аҙналыҡ эште йомғаҡлау.* **Йомғаҡлау һүҙе** һөҙөмтә итеп әйтелгән һуңғы һүҙ.

**ЙОМҒАҠЛЫ** *с.* **1.** Йомғаҡ итеп уралған. *Йомғаҡлы еп. Йомғаҡлы йөн.*

**2.** Тумалаҡлап йомарланған. *Йомғаҡлы май.*

**ЙОМДОРОУ** *ҡ. йөкм. ҡар.* **йомоу.**

**ЙОМҠОС** *с. диал. ҡар.* **йомро** [1] 3.

**ЙОМОҠ** [1] *с.* **1.** Йомолған, асыҡ түгел; ябыҡ. *Ауыҙы йомоҡ. Күҙе йомоҡ.*

**2.** *күсм.* Сер тотоусан, аҙ һөйләүсән. *Сабира кесе йәшенән йомоҡ булды. Минән башҡа бер кемгә лә, хатта әсәһенә лә, серен сисмәне.* И. Ғиззәтуллин.

**ЙОМОҠ** [2] *и. диал. ҡар.* **лепкә** 1.

**ЙОМОҠА** *и. диал.* Йомоҡай.

**ЙОМО́ҠАЙ** *и.* Аралашмаусан, һөйләшмәүсән, аҙ һүҙле кеше. *Йомоҡай ул, кеше менән бик һөйләшеп бармай.*

**ЙОМОЛДОРОУ** *ҡ. йөкм. ҡар.* **йомолоу** [2].

**ЙОМОЛОУ** [1] *ҡ.* **1.** *төш. ҡар.* **йомоу** 1. *Йомолған йоҙроҡ.*

**2.** Бер-береһенә тейеп, ҡымтылып ябылыу. *Ауыҙ йомола. Ирендәр йомолдо.* ■ *Йоҡо баҫҡан күҙҙәр йомолдо.* Д. Юлтый. *Йомолоп, таңды көткән сәскәләр күҙҙәрен асып, хуш еҫ һипте.* И. Насыри.

**ЙОМОЛОУ** [2] *ҡ.* **1.** Етеҙ хәрәкәт менән һөжүм итеү, ташланыу. *[Йыуан ҡорһаҡтар] йоҙроҡтарын күтәреп, таяҡтарын болғап уҡытыусыға йомолдолар.* Ғ. Дәүләтшин. *Һунарға йөрөп өйрәнгән башҡорт аты ҡуян артынан йомолдо.* Б. Хәсән.

**2.** Бөтә ынтылыш менән нимәгәлер, ҡайҙалыр йүнәлеү; ташланыу. *Бер һыбайлы елә. Аты .. йомолоп саба.* Т. Килмөхәмәтов. *Аттар йомро һуҡмаҡ ситендәге йәшел үләнгә йомолдо.* Ж. Кейекбаев.

**3.** *күсм.* Бөтә күңел менән бирелеү. *Йомолоп тыңлау. Йомшаҡ ҡурпыны һарыҡтар йомолоп ашай.*

**ЙОМОРСА** *и. диал.* Йоморсай.

**ЙОМОРСАЙ** *и.* Һаҙандар ғаиләһенә ҡараған аҡ тәңкәле, оҙонса йомро кәүҙәле йылға балығы; йомро сабаҡ. *Бейек түгел уның [Ҡаҫмарттың] ярҙары. .. Йоморсай ҡарпый ни бары.* Й. Солтанов.

**ЙОМОРСҠА** [1] *и. диал.* Кәрешкә.

**ЙОМОРСҠА** [2] *и. диал.* Йоморсай.

**ЙОМОРТҠА** *и.* **1.** Ҡоштарҙың һәм ҡайһы бер йәнлектәрҙең (мәҫ. гөбөргәйел, крокодилдың) ҡабыҡлы оҙонса түңәрәк яралғыһы. *Ҡаҙ йомортҡаһы. Һуйыр йомортҡаһы. Йомортҡа ҡабығы. Йомортҡа һалыу. Йомортҡа баҫыу.*/ Тауыҡтың аҙыҡҡа файҙаланылған шундай уҡ яралғыһы. *Йомортҡа ағы. Йомортҡаға баҫҡан ҡумәс.*

**2.** Ҡайһы бер бөжәк, селәүсендәрҙең оҙонсараҡ ваҡ бөртөксәләрҙән торған яралғыһы; күкәй. *Ҡырмыҫҡа йомортҡаһы. Күбәләк йомортҡаһы.*

**3.** *һөйл. ҡар.* түл 1.

◆ **Йомортҡа байрамы** христиандарҙың пасха байрамы. **Йомортҡанан йөй эҙләү** *ҡар.* **йөй.**

● *Йомортҡа тауыҡты өйрәткән.* Мәҡәл.

**ЙОМОРТҠАЛЫҠ** *и. ҡар.* **түллек.**

**ЙОМОРТОЙ** *и. диал.* Йоморсай.

**ЙОМОСҠА** *и. диал. ҡар.* **юныҫҡы** [1].

**ЙОМОУ** *ҡ.* **1.** Ҡымтып ябыу (ауыҙ, күҙ, усты). *Күҙҙе сырт йомоу.* ■ *Йоҡла һин, иркәм, йом һин, йом күҙең.* М. Хәй.

**2.** Ҡымтып йәшереү (ауыҙ, ус эсенә). *[Сәғиҙә] хатты йомарлап усына йомдо.* М. Тажи.

**3.** *күсм.* Аҫтыртын үҙләштереү. *[Нәҙерша — Байрамға:] Ал да йом. Эсеңдә тишмәҫ йөҙ илле һум.* Ә. Мирзаһитов./ *күсм.* Өндәшмәй, фашламай йәшереү; баҫырыу. *[Ҡотлобай — Наратҡа:] Икебеҙ ҙә гәйепле. Имәндәрҙе бергәләп оҙаттыҡ. Иң шәбе, ҡустым, беҙгә был эште йомоп ҡалдырыу.* Ф. Әсәнов.

◆ **Ауыҙ йомоу** *ҡар.* **ауыҙ. Уска йомоу** һаранланыу. *[Әбей — оҫтабикәгә:] Байтаҡ ҡул ҡереңде ауыҙланым, усыңа йома белмәнең.* Т. Хәйбуллин.

**ЙОМОШ** *и.* **1.** Кемгә булһа ла эшләргә, башҡарырға ҡушылған эш. *Йомош тыңлау. Йомош ҡушыу. Йомошҡа йөрөү. Йомошҡа ярау.* ■ *Сәлмән эшкә өлгөр, йомошҡа тилбер, һүҙгә тапҡыр, уйға отҡор булған* (Әкиәттән).

**2.** Эш, хеҙмәт буйынса кәрәк булған нәмә, эшләй торған эш. *Йомошо бар. Йомошо юҡ. Йомош менән йөрөү. Йомош менән килеү.* ■ *Зөлхизә әбей тышҡа йомош тапҡан кеше булып сығып китте лә, ҡабат әйләнеп ҡайтманы.* Н. Мусин.

**3.** Кәрәк ваҡытта файҙаланып тороу өсөн һорап алынған йәки биреп торолған нәмә. *Йомош алыу. Йомош биреү. Йомошҡа ебәреү.* ■ *[Ҡотлояр бай] кеше барһа, йомош бирмәй, үҙе лә кешегә йомош һорап сыҡмай.* Д. Юлтый.

**4.** Нимәгәлер тәбәлгән хәстәр; уй, моң. *Алтындуға батыр мал араһына барып, йүгәнен шылтыратты, ҡороғон ҡылтыратты, ти. Уға бер насар ғына буҙ тай әйләнеп ҡараны, ти. Башҡаларының йомошонда ла булманы, ти* (Әкиәттән). *Ямантауҙы ла ғына һаттылар дисәтинә һайын тәңкәгә. Аҡсаһы ла уның йомош түгел, һатыуҙары ҡыйын мәңгегә* (Халыҡ йырынан).

◆ **Юҡ йомошто бар итеп** һылтау табып, ҡайҙалыр барғанда әйтелә. *Бер-ике көн күренмәй торҙо ла, юҡ йомошто бар итеп, Шафиҡ был өйгә яңынан килде.* Я. Хамматов. **Йомош төшөү** кәрәклек, ихтыяж булыу. *Йомошом төшкәне юҡ.*

● *Йомошҡа килһәң, түҫтағыңды йәшермә.* Мәҡәл.

**ЙОМОШАТЫУ** *ҡ. йөкм. ҡар.* **йомошау.**

**ЙОМОШАУ** *ҡ.* Йомош (1 мәғ.) ҡушыу, ҡушып эшләтеү. *Кеше йомошау.*

**ЙОМОШ-ЙҮН** *йыйн.* Һәр төрлө йомош, эш, — *Нихәл, һаулыҡмы, бала-саға именме?* —

*Арыу әле хәҙергә.— Берәй йомош-йүнең бармы?* Һ. Дәүләтшина.

**ЙОМОШЛАНЫУ** *к. төш. кар.* **йомошлау.** *Йомоштар йомошланды.*

**ЙОМОШЛАУ** *к.* Йомошто (1, 2 мәғ.) башҡарыу, йомошто үтәү. *Йомошто йомошлау.* ■ *[Ҡарабаш] йомошлайһы йомоштарын йомошлап, тиҙ генә эшен бөтөрҙө лә, хәрби комиссариат машинаһына ултырып, Раевкаға юл алды.* И. Насыри.

**ЙОМОШЛО** *с. тар.* Урында эшләүсе; вазифалы. *Йомошло кешеләр.*

**ЙОМОШСАН** *с.* Кеше йомошон (1, 2 мәғ.) үтәүсән. *Йомошсан кеше.*

**ЙОМОШСО** *и.* **1.** Йомошҡа (1, 2 мәғ.) ебәрелгән кеше. *Йомошсо булып барыу.*

**2.** Ваҡ-төйәк эш, йомош өсөн тотолған хеҙмәтсе. *Йомошсо малай.* ■ *Шәүәли колхоз идараһында йомошсо булып йөрөй.* Ә. Харисов.

**ЙОМОШТАР** *и. иҫк.* Йомош (1, 2 мәғ.) менән йөрөгән кеше.

**ЙОМОШ-ЮЛ** *и. йыйн.* Кемгәләр ҡушылған төрлө йомош, ваҡ-төйәк эш. *Йомош-юлға йөрөү.* ■ *Сөнәгәт бәләкәйҙән үк йомош-юлға етеҙ, егәрле, эшкә ҡатҡыл булды.* Ж. Кейекбаев.

**ЙОМРАН** [1] *и.* Тейендәр ғаиләһенә ҡараған кимереүсе дала йәнлеге. *Йомран өңө.* ■ *Юл буйында һары бағана кеүек ҡатып торған йомрандар ялт итеп өңдәренә инеп китте.* Х. Ғиләжев.

**ЙОМРАН** [2] *и.* Бер башҡорт ырыуының исеме.

**ЙОМРАС** *с. һөйл.* Тумалаҡ, йомро. *Йомрас бит. Йомрас тауҙар.* ■ *Зәлифә тубығына йомрас эйәген терәне лә, онотолоп уйға ҡалды.* Н. Мусин.

**ЙОМРО** [1] *с.* **1.** Тумалаҡ рәүештәге. *Йомро таш. Йомро тау.* ■ *Йомро матур тояғыңды дағаларбыҙ, юрғам* (Халыҡ йырынан). // *[Байыҡ:] Ер йомроһо үҙенең барыр юлын бормаһа, тормош бөтмәҫ донъяла.* Б. Бикбай.

**2.** Арҡыры киҫелеше түңәрәк (оҙонса нәмәгә ҡарата). *Йомро таяҡ.* ■ *Тимер менән көпләнгән йомро һалҡын мейескә һөйәнеп торған егет .. ҡайтырға йыйынды.* Я. Хамматов.

**3.** Тулы итле, һимеҙ. *Йомро беләк. Йомро яурын.* ■ *Килдебай урта ғына йомро кәүҙәле. Яурындары, аяҡтары, хатта ҡул һырттары ла йомро.* Ғ. Дәүләтшин.

**4.** *күсм.* Күләме, һаны арыу уҡ ҙур. *Йомро ғына хаҡ.* ■ *Йыйып, күҙ алдына ҡуйып, тикшереп ҡараһаҡ, йомро ғына әҙәбиәт байлығы йыйылған.* Д. Юлтый.

◆ **Йомро баш** хәйләкәр һәм аҡыллы кешегә ҡарата әйтелә. *[Фәхри:] Ул тиклеменә баш етмәй минең. Әйтһә, бына Яҡуп курше әйтер инде, уның баш йомро.* Б. Бикбай. **Йомро юл** *кар.* **юл** [1].

**ЙОМРО** [2] *и. диал.* Сынаяҡ өҫтө (*кар.* **сынаяҡ** 1). *Бер сынаяҡ сәй эстем дә йомромдо түңкәреп ҡуйҙым.* Ғ. Ғүмәр.

**ЙОМРО** [3] *и. диал.* Йомарсай.

**ЙОМРОЛАНЫУ** *к. төш. кар.* **йомролау.** *Сукеп йомроланған тимер киҫәген икегә бүлделәр.* К. Мәргән.

**ЙОМРОЛАУ** *к.* Арҡыры киҫелешен түңәрәккә әйләндереү, йомро итеү. *Таяҡты йомролап юныу.*

**ЙОМШАҠ** *с.* **1.** Тейгәндә, баҫып, ҡапшап ҡарағанда тығыҙ булмай, яҡшы тәьҫир ҡалдырған; *киреһе* ҡаты. *Йомшаҡ диван. Йомшаҡ ҡар. Йомшаҡ мендәр.* // *Йомшаҡта ятыу.* // *Ҡамырҙы йомшаҡ баҫыу.* ■ *Башына йомшаҡ ҡара бесәй бүрек кейеп, байҙың ҡыҙы Нина килеп сыҡты.* Һ. Дәүләтшина. *Йомшаҡ итеп ҡаҙҙың ояһына һалам тигән түшәк түшәлгән.* Ш. Бабич./ Ҡабарып торған, нәфис (ҡул, бит һ. б. ҡарата). *Йомшаҡ бит. Йомшаҡ ирен.* ■ *Зөләйхаҙың йомшаҡ ҡулдарын тубығыма һалып, ҡул һыртын һыйпап, иркәләп ултырғым килә.* Т. Йәнәби. / Тотоп, ҡапшап ҡарауға нескә, ебәк кеүек (сәс, йөн, туҡыма һ.б. ҡарата). *Йомшаҡ йөн. Йомшаҡ үлән.* ■ *Көндәр ҡапыл йылы, ҡояшлы булып киткәс, ҡамыл төптәре йомшаҡ ҡурпылар менән ҡапланды.* Б. Бикбай. *Ебәк кеүек йомшаҡ ҡара сәстәр Зөлхизәнең зифа буйын тотош ҡаплап, аҡ ебәк күлдәк өҫтөнә ҡара күләгә ташлай.* З. Биишева.

**2.** Баҫымға, ҡыҫыуға еңел бирешеүсән; *киреһе* ҡаты. *Йомшаҡ балауыҙ. Йомшаҡ балсыҡ. Йомшаҡ ер.*/ Эшкәртеүгә еңел бирелә торған. *Йомшаҡ ағас. Йомшаҡ металдар.* / Яңы, иҫкереп, ҡатмаған. *Йомшаҡ икмәк.* // **Икмәк йомшағы** икмәктең эске йомшаҡ өлөшө.

**3.** Ҡарар күҙгә, ишетер ҡолаҡҡа хуш килерлек, ҡуҙғытмай торған, тыпаҫ түгел; яғымлы. *Йомшаҡ тауыш.* ■ *Һинең телең йомшаҡ булһа ла эсең зәһәр!* Ш. Шәһәр. *Тайга өҫтөнә йомшаҡ төн төшә. Көн яҡтыһын ай яҡтыһы алыштыра.* Б. Дим./ Саҡ ишетелерлек, әкрен, шым. *Мурзиндың балалары тураһында һөйләгәндә .. тауышының йомшаҡ ағышы, ..— Береһе лә Юлияның һөйөү менән ҡараған күҙҙәренән ысҡынманы.* Һ. Дәүләтшина./ Һалмаҡ, талғын. *Йомшаҡ хәрәкәт.* // *Йомшаҡ баҫып атлау.* ■ *Шып-шым ғына, һелкенмәй йомшаҡ сәңгелдәп барған сағыбыҙҙа санабыҙ бер һалыуға төшөп кит[те].* Ғ. Дәүләтшин.

**4.** *күсм.* Берәй төрлө тәьҫир, йоғонто, ҡыҫымға юл ҡуйыусан, ыңғай килеүсән, ныҡ түгел; *киреһе* ҡаты. *Йомшаҡ тәбиғәтле.* // *Йомшаҡ тороу.* ■ *Бәшәрҙең ауыҙынан ут сәсрәп тормай — йомшаҡ, үҙ тирәбеҙгә күберәк кеше йыйнай алманыҡ.* Б. Ишемғол. *Ул [Новиков] күңеле килгән саҡта бик йомшаҡ, һәр һүҙҙе тыңлаусан, иптәштәренә ярҙам итеүсән кеше.* Д. Юлтый. / Кеше хәлен уртаҡлашыусан, кеше мохтажын аңлаусан; мәрхәмәтле, шәфҡәтле. *— Ха-ха-ха... Фәғилә ни, бахыр, йомшаҡ күңелле кеше, алданып ҡуйыуы бар.* Б. Бикбай. *Инсан улын алдалау анһат, еңел, сөнки ул бер ҡатлы һәм йомшаҡ күңел.* Ш. Бабич./ Мәрхәмәтле, шәфҡәтле булғанлыҡты, асыҡ йөҙлөлөктө сағылдырған. *Йомшаҡ ҡараш.* // *Йомшаҡ йылмайыу. Йомшаҡ көлөү.*

**5.** Кешегә ҡарата киҫкен, талапсан түгел; *киреһе* ҡаты. *Йомшаҡ мөғәмәлә. Йомшаҡ хөкөм. Йомшаҡ яза.* // *Йомшаҡ күренеү.* ■ *Эште ныҡ уйлап, бисәләрҙән башлатып ебәрергә кәрәк. Берҙән, уларға закон йомшағыраҡ.* Б. Бикбай. *— Ҡуйсы, атай, ҡуйсы, атай, ҡыҙыңа йомшаҡ*

*булсы, атай.* «Алпамыша». *Прокурор асыуланманы: — Шаярмағыҙ, егеттәр,— тип йомшаҡ ҡына иҫкәртте, хатта асыулы кеүек булған йөҙөндә йылмайыу ҙа уйнап алды.* С. Агиш./ Тупаҫлыҡ, ҡатылыҡ менән һуғарылмаған, тупаҫ түгел. *Йомшаҡ шелтә.* // *Йомшаҡ өндәшеү. Йомшаҡ әйтеү.* ■ *Тимербулат .. командирҙың йомшаҡ һүҙҙәре йогонтоһо менән үҙенән-үҙе әйтеп ебәрҙе: — Командир ағай, мине лә отрядка яҙ!* һ. Дәүләтшина. *Минең һеңлем Гөлгәйшә иллә йомшаҡ һөйләшә, дуҫтарына «гөлкәйем», «әйкәйем» тип өндәшә.* А. Игебаев. *Ерән Ғәбеш тикшереүсе алдында үҙен бик йомшаҡ тотто.* Ғ. Әмири.

**6.** Тәьҫире киҫкен, көслө түгел, сағыштырмаса йылы (көн, климат һ.б. ҡарата). *Йомшаҡ ел. Йомшаҡ климат.* ■ *Әбей .. һөйләнеп ултыра торғас, талғын ғына елле, йомшаҡ тау һауаһына иҫергәндәй, башын муккә һалып, йоклап китте.* М. Тажи. *Ҡояш байышынан күгәреп сыккан күк болоттар .. кис менән ауыл өҫтөнә йылы йомшаҡ ямғыр бөртөктәре һибәләп үтте.* Т. Йәнәби.

**7.** Етерлек тиклем ҡеүәте булмаған, ныҡлы хәрби көскә эйә булмаған. *Обороналың йомшаҡ урыны.* ■ *Унда Австрия армияһы һуғыша, бындағыға ҡарағанда унда фронт йомшаҡ, тиҙәр.* Д. Юлтый.

**8.** Тәьҫир көсө, ҡеүәте бәләкәй булған, ҡаты булмаған. *Йомшаҡ сәй. Йомшаҡ эсемлек. Йомшаҡ тәмәке.* ■ *Һеттөң дурттән бер өлөшө тиклем кур һалынып, ун дүрт градус йылыла әсеп сыккан кымыҙ йомшаҡ кымыҙ була.* М. Ғөбәйҙуллин.

**9.** Тейешле дәрәжәле булмаған, насар. *Тәртибе йомшаҡ.* // *Тәртипте йомшаҡ ҡуйыу.*/ Кимәле, торошо түбән. *Йомшаҡ әҫәр.*

**10.** Үҙ эшен насар белгән, насар башҡарған. *Йомшаҡ уҡыусы.* // *Йомшаҡ шөғөлләнеү.* ■ *Йомшаҡ уҡыған балалар менән айырым эш алып барыла.* «Башҡортостан уҡытыусыһы», 1966, № 4.

♦ **Йомшаҡ барып төшөү** осоу аппаратының талғын барып төшөүе. **Йомшаҡ вагон** йоҡлау өсөн йомшаҡ урынлы пассажир вагоны. **Йомшаҡ йәйеп ҡатыға ултыртыу** һәйбәт кенә һөйләп, киреһен эшләү. **Йомшаҡ һыу** эзбизле тоҙҙары әҙ булып, һабынды еңел иретә торған һыу. *[Муйылбикә:] Ҡар һыуы кер йыуырға ла, сәйгә лә йомшаҡ була ул.* һ. Дәүләтшина. **Ҡолаҡ йомшағы** *ҡар.* **ҡолаҡ** 2.

● *Йомшаҡ ағасты ҡорт ашай.* Мәҡәл.

**ЙОМШАҠЛЫҠ** *и.* Йомшаҡ булыу сифаты, хәле. *Йомшаҡлыҡ күрһәтеү. Йомшаҡлыҡҡа юл ҡуйыу. Кешенең йомшаҡлығы. Климаттың йомшаҡлығы. Күңел йомшаҡлығы. Ҡараштың йомшаҡлығы. Мөғәмәләнең йомшаҡлығы. Обороналың йомшаҡлығы. Сәстең йомшаҡлығы. Тупраҡтың йомшаҡлығы. Түшәктең йомшаҡлығы. Тәртиптең йомшаҡлығы. Уҡыуға әҙерлектең йомшаҡлығы. Шелтәнең йомшаҡлығы. Эсемлектең йомшаҡлығы. Әҫәрҙең йомшаҡлығы.* ■ *Бөгөн көн үҙенең йылы йомшаҡлығы менән һәр кемде һоҡландырырлыҡ булып тора.* Т. Йәнәби. *Ҡатындар, һеҙҙең ҡулдарҙың йомшаҡлығын тойғаным бар.* Н. Нәжми.

**ЙОМШАРТҠЫС** *и.* Тупраҡты йомшарта торған ҡорал.

**ЙОМШАРТЫЛЫУ** *ҡ. төш. ҡар.* **йомшартыу** 1, 7. *Йомшартылған ер. Йомшартылған һыу.*

**ЙОМШАРТЫУ** *ҡ.* **1.** Берәй хәрәкәт, процесс арҡаһында йомшаҡ хәлгә әйләндереү, йомшаҡ итеү. *Балауыҙҙы иретеп йомшартыу. Мендәрҙе каккылап, һуккылап йомшартыу. Ҡамырҙы баҫып йомшартыу. Тирене крем һөртөп йомшартыу. Тимерҙе утта ҡыҙҙырып йомшартыу.* ■ *— Бәр, Әхми, бәр сукеште, бәр, ҡыҙғанда ҡаты тимерҙе йомшарт!* Ш. Шәһәр./ Кәүшәк, көпшәк хәлгә әйләндереү, йомшаҡ итеү. *Түтәлде йомшартыу.* ■ *— Ағасты ултыртыу ғына етмәй, .. тәрбиәләргә, төбөн йомшартырға, һыу һибеп торорға кәрәк.* М. Тажи.

**2.** Ҡарар күҙгә, ишетер ҡолаҡҡа хуш килерлек, яғымлы итеү. *Ҡарашты йомшартыу. Тауышты йомшартыу.*

**3.** *күсм.* Кемдең йәки нимәнеңдер ҡырҡыулығын, киҫкенлеген кәметеү. *Мәғфүрә .. иплән, яйлап һөйләп, Рәхимәнең күңелен йомшартырға тырышты.* һ. Дәүләтшина.

**4.** Ниҙеңдер көсөн, киҫкен тәьҫирен кәметеү. *Көрәште йомшартыу. Халыҡ-ара көсөргәнешлекте йомшартыу.* ■ *Мин уны [иптәште] минут, секунд һайын кыҫтаным. Уға куркынысты йомшартырға тырыштым.* Д. Юлтый. / Ниҙеңдер киҫкенлеген, ауыр тәьҫирен кәметеп, еңеләйтеү. *Хөкөмдө йомшартыу. Ғәйепте йомшартыу.* ■ *Буләр хан был сапкынды кылған хыянаты өсөн Ҡолтубә янына зинданға оҙатырға була ла, Аҡтубә уның яҙаһын йомшартыуҙы утенгәс, берлексәгә калдырҙы, ти* (Әкиәттән)./ Тупаҫлығын кәметеү (һүҙҙең). *Һүҙҙе йомшартып әйтеү.*

**5.** Температура тирбәлештәренең киҫкенлеген әҙәйтеп, сағыштырмаса йомшағыраҡ итеү (климатты). *Урман ағас запасы ғына түгел, ә һыуҙарҙы, ерҙе һаклай, климатты йомшарта.* «Совет Башҡортостаны», 1967, 12 март.

**6.** Ниҙеңдер көсөн, сифат кимәлен, дәрәжәһен, көсөргәнешен әҙәйтеү. *Иғтибарҙы йомшартыу.*

**7.** Ниҙеңдер ҡатылығын, ҡуйылығын, әселек көсөн әҙәйтеү. *Эсемлекте йомшартыу.*/ Эзбизле тоҙҙарҙан таҙартыу; татырһыҙландырыу. *Һыуҙы йомшартыу.*

**ЙОМШАРЫУ** *ҡ.* **1.** Берәй хәрәкәт, процесс арҡаһында йомшаҡҡа әйләнеү, йомшаҡ хәлгә килеү. *Ҡар һыуы менән йыуһаң, сәс йомшарып ҡала. Крем һөрткәс, ҡул йомшарып ҡалғандай булды. Ямғыр яуып, ер йомшарҙы.* ■ *Шул ауырлыктан, шул эҫелектән тәндәрем тирләне, йомшарҙы.* Д. Юлтый.

**2.** Ҡарар күҙгә, ишетер ҡолаҡҡа хуш килерлек яғымлыға әйләнеү. *Ҡараш йомшарыу. Тауыш йомшарыу.*

**3.** *күсм.* Кемдең йәки ниҙеңдер ҡырҡыулығы, киҫкенлеге кәмеү. *Күңел йомшарыу.* ■ *Ул [Йәнтимер] минең теге йыйылышта һөйләгән телмәрҙе ишеткәндән һуң миңә ҡарата йомшара төштө, шулай ҙа артыҡ маһайтып ебәрергә теләмәй ине әле.* С. Агиш. *Үҙенә ҡарата шундай йылы һүҙ әйтеүенә бөтә күңеле менән ирегән Ҡолсобай бер аҙ йомшарҙы.* Я. Хамматов.

**4.** Ниҙеңдер көсө, киҫкен тәьҫире кәмеү. *Көрәш йомшарҙы. Халыҡ-ара көсөргәнешлек йомшарыуға бара.* ■ *Дошмандың ут көсө бермәбер йомшарҙы.* Ғ. Әмири./ Ниҙеңдер киҫкенлеге, ауыр тәьҫире кәмеп, еңелләшеү. *Хөкөм йомшарҙы. Яза йомшарҙы.*

**5.** Температура тирбәлештәренең киҫкенлеге әҙәйеп, сағыштырмаса йомшағыраҡ булыу (көнгә, климатҡа ҡарата). *Һауа көндөҙгөнән әллә нисә дәрәжә йомшарып, һулап түйғыһыҙ бер хәлгә килде* Ғ. Ибраһимов.

**6.** Ниҙеңдер көсө, сифат кимәле, дәрәжәһе, көсөргәнеше әҙәйеү. *Игтибар йомшарҙы. Тәрбиә эше йомшарҙы.*

**7.** Ниҙеңдер ҡатылығы, тәьҫир көсө, әселеге әҙәйеү. *Оҙаҡ ултырып, һыра айныған, йомшарған.*/ Әзбизле тоҙҙарҙан таҙарыу, татырһыҙланыу. *Һыу йомшарған.*

**ЙОМШАТЫУ** *ҡ. ҡар.* **йомшартыу.**

**ЙОМШАУ** *ҡ. ҡар.* **йомшарыу.**

**ЙОНДОҘ** *и.* **1.** Тәбиғәте менән Ҡояшҡа оҡшаш һәм ҡыҙыу газдарҙан (плазманан) торған, төнөн күктә яҡты нөктә кеүек күренгән күк есеме. *Таң йондоҙо. Тимерҡаҙыҡ йондоҙо. Өлкәр йондоҙо. Йондоҙҙар системаһы. Йондоҙҙар картаһы. Йондоҙ атылыу.* ■ *Күк йөҙө аяҙ. Алыҫ йондоҙҙар тоноҡ ҡына балҡый. Улар гәжәп ваҡ күренәләр.* Ә. Вәли. *Зөләйха, һин ерҙә йөрөгән хур ҡыҙы, күҙҙәреңдә яна күктең йондоҙо.* Салауат Юлаев. **Зөһрә** (*йәки* **Сулпан**) **йондоҙо** *һөйл.* Венера планетаһының исеме. **Йондоҙ һанау** 1) *тар.* йондоҙҙарға ҡарап, киләсәк ваҡиғаларҙы күрәҙәләү; астрология; 2) *күсм.* белмәгән кешене һемәйтә торған элекке аулаҡ өй мәрәкәһе (еңенән үтә ҡараһаң, йондоҙ күренә, тип, кешенең башына бишмәт бөркәйҙәр ҙә, ең эсенә сүмес менән һыу ҡойоп ебәрәләр). **Йондоҙ һанаусы** йондоҙға ҡарап кешенең яҙмышын әйтеү менән шөғөлләнеүсе; астролог.

**2.** *эйл. ф.* **йондоҙом** иркәләгәндә әйтелә. *Бәүбәү, йом күҙең, йоҡла, балам, йондоҙом* (Сәңгелдәк йырынан).

**3.** Осло башлы сығанаҡтары әйләнә буйынса берҙәй йыраҡлыҡта урынлашҡан геометрик фигура. *Биш мөйөшлө йондоҙ. Кремль йондоҙо. Йондоҙ тағыу.* ■ *Иптәш, ҡара: бына ҡыҙыл йондоҙ. Ул — совет һалдаттарының айырмалыҡ билдәһе.* З. Рафиҡов./ Шундай фигура рәүешендәге нәмә. *Йондоҙ сигеү.*

**4.** Китап, яҙмала ҡулланыла торған шартлы билдә.

**5.** Берәй өлкәлә дан ҡаҙанған, атаҡлы кешегә ҡарата әйтелә. *Эстрада йондоҙо. Кино йондоҙо.*

**6.** *иҫк.* Ун ике йыллыҡ мөсәлдәге һәр йылдың ун икенән бер өлөшө; ай. *Аҡһаҡ Тимер хан килде. .. Сысҡан йылында, гәкрәп йондоҙоноң икенсе көнөндә Ҡазан шәһәрен алды.* «Башҡорт шәжәрәләре», 1960.

♦ **Диңгеҙ йондоҙо** шырт тиреләләр тибындағы умыртҡаһыҙ диңгеҙ йәнлеге. **Йондоҙ балыҡ** *диал. ҡар.* **йоҡолоҡ** [2]. **Йондоҙ ҡашҡа** *ҡар.* **ҡашҡа. Йондоҙ һанарлыҡ** түбә башы тишек-тошоҡ булғанда әйтелә. *Түбә таҡталары мүкләнеп, тетелеп бөткән — йондоҙ һанарлыҡ.* Б. Бикбай. **Йондоҙ ямғыры** күктә күренгән ҡойроҡло йондоҙҙар ағымы. **Ҡойроҡло йондоҙ** Ҡояш тирәһендә эллипс буйынса әйләнеп, шул юлдың Ҡояшҡа яҡын еренә килгәндә, ҡойроҡлана торған ваҡ күк есеме. **Өмөт йондоҙо** киләсәктә нимәнелер хәл итеүгә ныҡ ышанып, ҙур өмөт бағлап ҡараған кешегә ҡарата әйтелә.

● *Ҡойроҡло йондоҙ көн дә тыумай.* Мәҡәл.

**ЙОНДОҘЛАМА** *и. ҡар.* **йондоҙнама.**

**ЙОНДОҘЛАУ** *ҡ.* Йондоҙ биҙәге төшөрөү. *Йондоҙлап сигелгән таҡыя.*

**ЙОНДОҘЛО** *с.* **1.** Йондоҙҙар менән ҡапланған; йондоҙҙар күп булған. *Йондоҙло кистәр. Йондоҙло күк. Йондоҙло төндәрҙә.*

**2.** Йондоҙ (3 мәғ.) формаһындағы, йондоҙ рәүешендәге. *Йондоҙло биҙәк.*

**ЙОНДОҘЛОҠ** *и.* Бер исем аҫтына берләштерелгән йондоҙҙар төркөмө. *Оло Етегән йондоҙлоғо.*

**ЙОНДОҘНАМА** [*төрк.*+*фарс.*] *и. иҫк.* Тормош хәлдәрен йондоҙҙарҙың торошона бәйләп аңлатҡан китап (күрәҙәлек өсөн ҡулланыла). **Йондоҙнама асыу** йондоҙнама буйынса күрәҙәлек ҡылыу.

**ЙОНДОҘНАМАСЫ** *и. иҫк.* Йондоҙнама буйынса күрәҙәлек иткән кеше; астролог.

**ЙОНДОҘСО** *и. иҫк.* Йондоҙ (1 мәғ.) һанаусы; астролог.

**ЙОНСОЛОУ** *ҡ. эйһ. ф. ҡар.* **йонсоу** [1]. *Юлда йөрөп йонсолған.*

**ЙОНСОТҠОС** *с.* Ыҙа, ғазап сиктерә торған; интектергес. *Йонсотҡос ямғырҙар.* ■ *Миләүшә лә йонсотҡос кисерештәрҙән бөтә тәненә һеңгән хәлһеҙлектән арына барҙы.* Д. Исламов.

**ЙОНСОТОЛОУ** *ҡ.* **1.** *төш. ҡар.* **йонсотоу** 1, 2. *Йонсотолған ат.*

**2.** *эйһ. ф. ҡар.* **йонсотоу 1**, 2. *Баҫыуҙан-баҫыуға сабып, ныҡ йонсотолған.* Р. Ханнанов.

**ЙОНСОТОУ** *ҡ.* **1.** Тән һәм йән ыҙаһы сиктереү; ыҙалатыу, интектереү. *[Гөлзифа — картына:] Кеше арығандыр, ял итһен, йонсотма буш әңгәмәң менән.* Я. Вәлиев. *[Рәхимә:] Серәкәй малды йонсотмаһын, .. төтөнлөк һалһындар.* Һ. Дәүләтшина. *Баҫма, ҡайғы, мине күп йонсотма, йөрәгемә ҡандар һауҙырма.* Х. Ғәбитов. *Нескә билле Лида уның [Амуровтың] күҙе алдынан китмәй йонсота.* Н. Мусин.— *Быңа ағас мәсьәләһе йонсота!* Р. Солтангәрәев.

**2.** Мохтажлыҡ кисертеү. *Һыуға йонсотоу.*

**3.** *эйһ. ф. ҡар.* **йонсоу** [1] 1.

**ЙОНСОУ** [1] *ҡ.* **1.** Тән һәм йән ыҙаһы кисереү; ыҙаланыу, интегеү. *Ауыр эштән йонсоу. Төрлө мәшәҡәттән йонсоу.* ■ *[Айбулат] Имайҙың екереүҙәренән йонсоп, ыйыҡ булып бөткән.* Һ. Дәүләтшина. *Һин йонсорһоң тип юлда, борсолоп бөттөм бында.* А. Игебаев. *Башҡортостан! Күңел тула, үткәнем иҫкә алһам: яфалы тормош кисереп, йонсоған халҡым тамам.* М. Туктамышев. *Атаһы бик йонсоған, Биктимер өсөн ҡайғырып, күҙҙәре һуҡрайған* (Әкиәттән).

**2.** Мохтажлыҡ кисереү. *Утынға йонсоу.*

**ЙОНСОУ** [2] *с.* **1.** Ыҙа сигеп арыған, талсыҡҡан, йонсоған. *Йонсоу кеше.* ■ *Күп егелгән йонсоу аттар беренсе һыуыҡты уҡ күтәрә алмай,*

*елгә һырт биреп, үҙҙәренән-үҙҙәре ауыл ягына ыңғайланы.* Б. Бикбай./ Тынғы бирмәгән, күңелһеҙ, борсоулы. *Тик бөгөн һалдат кыуанмай, кәйефе йонсоу — шинелгә уткән, окопта тубыгынан һыу.* М. Кәрим. *Йоко осоп йөрөй алыҫ. .. Мине йонсоу уйҙар урап алгандар.* Ғ. Әмири.

**2.** Ыҙалы, яфалы, мәшәкәтле. *Йонсоу заман. Йонсоу тормош.*

**3.** Ямғырлы, һыуыҡ елле, буранлы (көнгә, һауаға ҡарата). *Болоттар таралырга теләмәгәндәй, тагы ла укмаша, тагы ла алга саба. Бына бер аҙна инде калала ошондай йонсоу көндәр тора.* З. Әхмәтов. *Көҙ. Көн йонсоу. Вак ямгырҙар асфальт битен убә урамда.* Ғ. Сәләм.

**ЙОНСОУЛАНЫУ** *к.* Йонсоуға әйләнеү, боҙолоу (көнгә ҡарата).

**ЙОНСОУЛАУ** *к.* Йонсоу булыу, боҙолоу (көнгә ҡарата). *Көндәр капыл йонсоулап китте. Ысын көҙ башланды.* Б. Бикбай.

**ЙОНСОУЛЫ** *с. диал. кар.* **йонсоу** [2] 2, 3.

**ЙОП** *с.* **1.** Икегә тигеҙ бүленгән; *кирәһе* таҡ. *Йоп һан.* ■ *[Акъял батыр — Урман батырга:] һанаган сакта йондоҙҙар так булһа, мин ауырыу булырман, ә йоп булһа, иҫән булырмын* (Әкиәттән).

**2.** Үҙ-ара ишле, парлы. *Йоп кылыу. Йоп булыу.* ■ *Бына хәҙер балалар берәү түгел йоп кына. Береһе кыҙ, береһе малай — бер-беренә тиң генә.* М. Буранғолов.

♦ **Йоп күреү** тиңһенеү, иш итеү. *[Айһылыу — Урал батырга:] Беҙҙең илде хуп күрһәң, мине үҙеңә йоп күрһәң, әйҙә беҙгә барайык.* «Урал батыр».

**ЙОП-** *киҫ.* **Йо**- ижеге менән башланған сифат һәм рәүешкә ҡушылып, артыҡлыҡ дәрәжәһен бирә. *Йоп-йомро. Йоп-йомшак. Йоп-йока.*

**ЙОПАН** *с. диал.* Ялҡау.

**ЙОПАР** [1] *и.* Ҡайһы бер йәнлектәрҙең биҙендә була торған хуш еҫле май. *Йопар еҫе.*

● *Йопарҙы йәшерһәң дә, еҫенән беленер.* Әйтем.

**ЙОПАР** [2] *и.* Бөжәк ашаусылар төркөмөнә ҡараған оҙон моронло, затлы ялтыр тиреле, күл, йылға буйҙарында йәшәгән, ҡыҫҡа аяҡлы һөтимәр йәнлек. *Йопар тиреһе. Йопарҙың өңө яр төбөндә, өңөнөң ауыҙы һыу аҫтында була.*

**ЙОПАРЛЫ** *с.* Хуш еҫле. *Йопарлы һабын.*

**ЙОПЛАНЫУ** *к. иҫк.* Икәү-ара парланышыу; ишләшеү. *[Урал:] Кешеләрҙең йопланып, быуын-быуын үрсешеп .. торасагын белдем мин.* «Урал батыр».

**ЙОПЛАШТЫРЫУ** *к. иҫк.* Иш итеп ҡауыштырыу; парлаштырыу. *[Бикйән — Көләйшәгә:] Әсәң дә хәбәрһеҙ түгел. Ырыҫ булһа, икебеҙҙе йоплаштырырга үҙе теләй* (Әкиәттән).

**ЙОПЛАШЫУ** *к. иҫк.* Икәү-ара парлашыу.

**ЙОР** [1] *с.* **1.** Етеҙ, тиҙ хәрәкәтле. *Йор егет. Йор йылга.* // *Йор агыу.* ■ *Йыр йырланы миңә йор инеш.* М. Уразаев.

**2.** Шаян, үткер, тапҡыр (һүҙгә һәм шундай һүҙле кешегә ҡарата). *Йор һүҙле. Һүҙгә йор кеше.* ■ *Ауылдың йор кешеләре .. сиган картына «Ғариф старостаның гөбөрнаторы» тип исем такты.* Ж. Кейекбаев.

**ЙОР** [2] *и. диал.* Тирә, сик. *Ошо йорҙа булырга тейеш.*

**ЙОРАТ** *и.* **1.** Нимәгәлер ишара яһаған билдә. *Алдауҙың йораты ла күренмәгәс, ул һикереп тороп, әсәһенең муйынына һарылды.* Т. Килмөхәмәтов.

**2.** Исеме есеменә тура килмәгән йәки үҙенең исемен һаҡлап та элекке сифат, дәрәжә, бәҫен юғалтҡан кеше, нәмә, күренешкә һ. б. ҡарата әйтелә. *Ир йораты. Өй йораты.* ■ *[Апай] ниндәйҙер таушалган китап йораты килтереп тоттора. Уның башы ла, ахыры ла юк.* К. Мәргән. *Тамам шашты был малай йораты.* Ф. Иҫәнғолов.

**3.** *иҫк.* Яңы ғына үҫә башлаған ялғы. *Бынау йоморткаңың йораты кан йыя башлаган.* М. Ҡулаев.

**ЙОРҠА** [1] *и. һир. һөйл.* Ниҙер алырға хоҡуҡ биргән ҡағыҙ; талон. *Бензин йоркаһы.*

**ЙОРҠА** [2] *и. кар.* **йорҡаҡ** 1.

**ЙОРҠАҠ** *и.* **1.** Өҙөп, ҡырҡып алынған киҫәк. *Кагыҙ йоркагы.*

**2.** *кусм.* Ҙурҙың бер бәләкәй өлөшө, берәмеге. *Хажи солтан карагалпак халкының бер йоркагы.* Ғ. Хөсәйенов.

**3.** *кусм. диал. кар.* **йорат.** 2. *Егет йоркагы.*

**ЙОРЛАНЫУ** *к.* Йор, шаян ҡыланыу. *[Кыҙылармеецтар] йорлана, бер-береһенә уйнап үткер һүҙҙәр ташлай, көлөшә башлайҙар.* А. Таһиров.

**ЙОРЛОҠ** *и.* Шаян ҡыланыш; сослоҡ, үткерлек. *[Ташбулат] инде шактай картайган, ләкин элекке йорлого һәм хәтере якшы һакланган.* С. Агиш.

**ЙОРОҠ** *и. һөйл.* Халыҡта ныҡыған дөйөм тәртип; йола.

♦ **Йороҡҡа килмәгән** ыңғайға килмәгән; кире. *Йорокка килмәгән кеше.*

**ЙОРОН** *и.* Иләгән тире ярпыһы, тире ҡырҡындыһы. *Йорондан бүрек тегеү.* // *Йорон бейәләй. Йорон салбар. Йорон тун.*

● *Уңган катын йорондан элкеп куйтыр сыгарыр.* Әйтем.

**ЙОРСО** *и. диал.* **1.** Тәнәй.

**2.** Ҡәйнеш.

**ЙОРТ** *и.* **1.** Йәшәү өсөн, төрлө ойошма һ. б. урынлаштырыу өсөн тәғәйенләнгән ҡоролма; бина, өй. *Агас йорт. Таш йорт. Ике катлы йорт. Йорт урыны. Йорт һалыу.* ■ *Кайтып ук ятыр өсөн йортом юк.* «Алпамыша». **Йорт алды** *шул ук* **ишек алды** (*кар.* **ишек**). **Йорт идаралығы** билдәле бер нисә йортто көнкүреш яғынан хеҙмәтләндереү һәм күҙәтеү бурысын үтәгән ойошма. **Йорт кенәгәһе** йортта тороусыларҙы теркәп барған китап (йорт идараһы тарафынан башҡарыла).

**2.** Айырым бер ғаиләнең хужалығы. *Йорт кәрәге. Йорт каралдыһы. Йорт хужаһы. Йорт эштәре. Йорт карау.* ■ *— Әйҙә, куҙе беселдәп йөрөһә лә янымда калыр, бәлки, баҫыла төшөп, йортка йога башлар.* Ф. Иҫәнғолов. *Егет бөтә йортка хужа булып кала* (Әкиәттән)./ Шул хужалыҡты уратып алған кәртә эсе. *Йорт капкаһы. Йортка сыгыу.* ■ *Кискә табан йорт уртаһында, йәшел үлән өҫтөндә бик ҙур табын йыйыла* (Әкиәттән)./ Шул хужалыҡтарҙы иҫәпләү бе-

рәмеге. *Һикһән биш хужалыҡ берләште, яңғыҙактар — ун ике йорт.* М. Тажи./ Ҡулға эйәләштерелгән, хужалыҡта аҫралған ҡош-ҡорт, хайуандарға ҡарата әйтелә. *Йорт ҡоштары. Йорт ҡуяны. Йорт хайуандары.*

**3.** Культура-ағартыу, фән, көнкүреште хеҙмәтләндереү һ. б. дәүләт ойошмаһы һәм шул ойошма урынлашҡан бина. *Актёрҙар йорто. Бала табыу йорто. Культура йорто. Матбуғат йорто. Мәғариф йорто. Уҡытыусылар йорто. Ял йорто. Инвалидтар йорто. Ҡарттар йорто.* ■ *Балалар йорто асылған. Унда йәтим балаларҙы аҫрайҙар: ашаталар, кейендерәләр, уҡыталар.* З. Биишева.

**4.** Бер хужалыҡ булып йәшәгән ғаилә, кешеләр һәм уларҙың ғүмер иткән төйәге. *Ата йорто. Тыуған йорт.* ■ *[Ҡатын:] Сит ергә китеп үлгәнсе, үҙ йортомда үләм.* Д. Юлтый.

**5.** Этник берәмеккә ойошҡан халыҡ; ил, ырыу. *Бөрйән йорто. Ҡатай йорто. Нуғай йорто.* ■ *Бөтә табын йорто ҡатайҙарға ярҙамға ташланған.* Ә. Вахитов.

**6.** Элекке башҡорттоң йәйгелектә тәбиғәткә сығып йәшәгән урыны; йәйләү. *Йәйге йорт. Көҙгө йорт. Йортҡа күсеү.* ■ *Яҙғы йортҡа күсенер көн дә етте. Күсенә торған көндө бөрәү ҙә йоҡламаны.* Я. Хамматов.

**7.** *тар.* Кантон эсендә булып, бер нисә ауылды биләп торған административ-территориаль берәмек. *Йорт башҡармаһы. Йорт старшинаһы. Йорт йыйыны.*

♦ **Йортҡа бәрәкәт!** кешегә барып ингәндә әйтелә торған теләк. *[Нурый:] Әссәләмәғәләйкүм! Йортҡа бәрәкәт!* Х. Ибраһимов. **Йортҡа инеү** өйләнеп, ҡатындың ата-әсәһе һ. б. менән бергә йәшәргә инеү. **Йорт күрһәтеү** туйға тиклем ҡоҙаларҙы кейәү өйөнә саҡырып, ҡунаҡ итеп, бүләк бирсү. **Уҡыу йорто** юғары йәки махсус урта белем бирә торған мәктәп. *Юғары уҡыу йорто.*

**ЙОРТАУАЙ** *и. тар.* Кантон эсендәге бер нисә ауылды берләштереп торған административ-территориаль берәмектең башлығы.

**ЙОРТ-ЕР** *и. йыйн.* **1.** Кешенең бөтә хужалығы: өйө, милке, биләгән ере. *Ҡайһы бер йорт--ерһеҙ кешеләр утарға барып урынлашты.* Б. Хәсән. *Ялбыр йөнлө Алабай йорт-ерҙәрҙе һағалай.* Ғ. Амантай.

**2.** Тирә-яҡ халыҡ, ил. *— Йорт-ер алдында ҡәйнешеңдең хаҡын төшөрмә. Ят ағаһын еҫкәгәнсә, үҙ кешең булыр, ят итмәҫ.* һ. Дәүләтшина.

**ЙОРТ-ИЛ** *и. йыйн.* Халыҡ һәм ил. *Яҡшы аҙамат ил көтһә, йорто имен көтөләр; кире аҙамат йорт көтһә, йортон-илен йүнкетер* (Ҡобайырҙан).

**ЙОРТ-ЙЫҺАЗ** *и. йыйн.* Йорт һәм бөтә булған йыһаз. *Байҙың бөтә нәмәһе етеш, кәртә- ҡураһы бөтөн, йорт- йыһазы шәп, мал-тыуары күп, ти* (Әкиәттән).

**ЙОРТ-ҠАРАЛТЫ** *и. йыйн.* Йорт һәм бөтә булған ҡаралты.

**ЙОРТ-ҠУРА** *и. йыйн.* Йорт һәм бөтә кәртә-ҡура. *Күберәк үҙ йорт-ҡураһы тирәһендә соҡсонған кешеләр ҙә бар.* Ә. Вәли.

**ЙОРТ-МИЛЕК** *и. йыйн.* Йорт һәм бөтә булған милек; йорт- мөлкәт.

**ЙОРТ-МӨЛКӘТ** *и. ҡар.* **йорт-милек.**

**ЙОРТСОЛ** *с.* Йорт эшенә уңған; хужалыҡсыл. *Йортсол ҡатын.*

**ЙОРТ-ЮШАН** *и. йыйн.* Кемдең йәки нимәнеңдер ҡарамағында булған бөтә байлыҡ; милек, мөлкәт. *[Кәрим:] Һаумы, именлекме? Малтыуарың, йорт-юшаның именме?* С. Кулибай.

**ЙОҪОҠ** *и. ҡар.* **юҫыҡ.**

**ЙОҪОҠЛАУ** *ҡ. ҡар.* **юҫыҡлау.**

**ЙОТ** *и.* **1.** Ҡоролоҡ булып, илгә килгән аслыҡ. *Йот йылы. Йот булыу.* ■ *Ҡола дала! Йәйен үлән көйрәй, көҙгә керһәң — баткаҡ, ҡышын — йот.* Р. Бикбаев.

**2.** Һуңғы сиккә еткән мохтажлыҡ; юҡһыҙлыҡ. *Абдулла ахун халыҡ талап, илде ҡалдырҙы йотҡа* (Халыҡ йырынан).

**3.** *с. мәғ.* Ашамай асыҡҡан; ас. *[Заятүләк:] Ҡаңғылдаҡ ҡаҙҙы алығыҙ, буш ҡаҙанға һалығыҙ, йот тамаҡҡа алығыҙ.* «Заятүләк менән Һыуһылыу».

● *Илеңә йот килһә, малыңа көс.* Әйтем.

**ЙОТАТЫУ** *ҡ. диал. ҡар.* **йөҙәтеү** 1, 2.

**ЙОТАУ** *ҡ. диал. ҡар.* **йөҙәү** [1] 1, 2.

**ЙОТКО: йотко ҡармаҡ** иң ваҡ ҡармаҡ. *Сабаҡты йотко ҡармаҡ менән тотабыҙ.* Ғ. Хөсәйенов.

**ЙОТҠОЛОҠ** [1] *и.* Ҡыҙыл үңәстең иң өҫкө өлөшө. *Иштуған йотҡологона килеп ултырған ҙур төйөндө уҙғарып ебәрә алмай, тамағын ҡаты итеп ҡырып ҡуйҙы.* З. Биишева.

♦ **Йотҡолоҡ булыу** тамаҡ ауыртыу.

**ЙОТҠОЛОҠ** [2] *и.* Ыуылдырыҡтан яңы сыҡҡан ваҡ балыҡ; селбәрә. *Һыу ситендә йотҡолоҡтар ҡыуышып уйнай.* А. Таһиров.

**ЙОТЛАУ** *ҡ. һөйл.* Аслыҡ кисереү; асығыу. *Ҡоро йылы йотлап, мал бик ҡырылды.*

**ЙОТЛОҒОУ** (йотлоҡ*ғ*) *ҡ.* **1.** Туймаҫтай булып, ҡылҡынып ашау, эсеү, һулау һ. б. *Айбулат йотлоғоп эсә, ямаулы күлдәген асып, арҡаһын елләтә.* һ. Дәүләтшина. *Ул [Биктимер] йотлоғоп-йотлоғоп тәмәке тарта башланы.* Б. Ишемғол.

**2.** *күсм.* Бөтә күңел менән бирелеү. *Йотлоғоп ҡарау. Йотлоғоп тыңлау. Йотлоғоп уҡыу,* ■ *Күҙҙәреңде текәп ҡара төңгә, көтмә мине, һылыуым, йотлоғоп.* Х. Ҡунаҡбай.

**ЙОТЛОҠ** *и.* Ҡоролоҡ булып, илде ас иткән хәл; йот. *Бына бер заман йотлоҡ килгән: иген уңмаған, бесән үҫмәгән, халыҡ асыға башлаған* (Әкиәттән).

**ЙОТЛОҠТОРОУ** *ҡ.* Кешенең уй, күңелен үҙенә йәлеп итеү. *Заһир Исмәғилевтең моңға бай көйҙәре кешене йотлоҡтороп ағә ла ағә.* Н. Сабитов.

**ЙОТОҒОУ** (йотоҡ*ғ*) *ҡ.* **1.** Ҙур мохтажлыҡ кисереү, нимәлер булмауҙан яфаланыу. *Бесәнгә йотоғоу.*

**2.** Аслыҡ кисереү; асығыу *[Атайҙар] мәңге бил бөгөп тә, тир түгеп тә, икмәк төҫө күрмәй йотоҡҡан.* Ш. Биҡкол.

**ЙОТОҠ** *с.* Ныҡ мохтажлыҡ кисергән, етешһеҙ булған. *Тыштан ялтырап йөрөһә лә күптән буйҙаҡ булған ир эске кейемгә йотоҡ ине.* Б. Бикбай.

**ЙОТОҠЛАНЫУ** *к. һөйл.* Нимәгәлер ныҡ мохтажлыҡ кисереү.

**ЙОТОҠТОРОУ** *к. һөйл.* Нимәгәлер мохтаж итеү, мохтаж итеп интектереү. *Аҡсаһыҙ йотоҡтороу. Утынһыҙ йотоҡтороу.* / Астан интектереү; асыҡтырыу. *[Самат — һарыҡтарға:] Йотоҡторҙоммо? Ярар инде, ашатайым.* Я. Вәлиев.

**ЙОТОЛОУ** *к.* **1.** *төш. ҡар.* **йотоу** 1—4. *Дым тоҙ тарафынан йотолдо. Күҙ йәше саҡ-саҡ йотолдо. Хәсрәт тиҙ генә йотолмай.* ■ *Мәжлес ҡотора. Туҫтаҡҡа һалынған балдар сәкәтеп йотола.* Т. Хәйбуллин.

**2.** Һеңеп, батып, эскә инеү. *Гүйә бөтә кеше төпһөҙ упҡынға йотолорон алдан белә.* Д. Юлтый.

**3.** *күсм.* Бөтә күңел менән бирелеү; йотлоғоу. *Йотолоп ҡарау. Йотолоп тыңлау. Йотолоп уҡыу.* ■ *Мин эште ташлап, романға йотолдом.* Ғ. Хәйри.

**ЙОТОМ** *и.* Бер йоторлоҡ күләм. *Бер йотом һөт.* ■ *Йотом һауаһы ла был ватандың .. беҙҙең өсөн бик-бик ҡәҙерле.* Т. Морат. *[Дейеү:] Йылғама ятып, ике генә йотом һыу эсәйемсе* (Әкиәттән).

**ЙОТОМЛАУ** *к.* Йотом-йотом итеү. *Йотомлап эсеү.*

**ЙОТОМЛОҠ** *с.* Йотоп ебәрерлек. *Ике йотомлоҡ һыу.*

**ЙОТОНОУ** *к.* **1.** Йотҡан хәрәкәт яһау; ҡылҡыныу. *Эткол бай .. бер нисә тапҡыр йотоноп алды.* Т. Хәйбуллин.

**2.** *күсм.* Үҙләштерергә, ҡулға төшөрөргә ҡыҙышыу; тамшаныу. *Бөгөн ер һатам, тип, ул йүгергән, бер илле һумды күп күреп йотонған* (Бәйеттән).

**3.** *ҡар.* **йотлоғоу** 2. *Йотоноп ҡарау.*

**ЙОТОНОШОУ** *к. урт. ҡар.* **йотоноу** 3. *Урал һүҙен бары ла йотоношоп тыңлаған.* «Урал батыр».

**ЙОТОУ** *к.* **1.** Нимәнелер (ашамлыҡ, эсемлекте һ. б.) мускулдар ярҙамында ауыҙҙан ҡыҙыл үңәскә һәм ашҡаҙанға оҙатыу. *Дарыу йотоу. Һыу йотоу. Йотоп ебәреү. Сәйнәп йотоу.* ■ *[Ҡауҙы] ниҙер тотоп алып, һоғаланып йотоп ебәрә.* З. Биишева. *Урал батыр һыуҙың бер тамсыһын да йотманы, .. тирә-яҡҡа бөркөп ебәрҙе, ти.* «Урал батыр». / *һөйл.* Ауыҙға алыу; ашау. *Йылы аш йотоу.* ■ *Бөгөн Гөлбоҫтан еңгә иртәнсәктән бирле балалары менән бер төйөрөм аш йотҡаны юҡ.* Ғ. Дәүләтшин. / Үпкәгә алыу; һулау. *Саф һауа йотоу. Төтөн йотоу.* ■ *Мин килмешәк булып тыуманым, оло юлдың йотоп туҙанын.* М. Кәрим. / *күсм.* Аң-зиһенгә алыу; һеңдереү. *Иҫле бала, уҡытыусының һәр һүҙен йотоп ҡына ултыра.*

**2.** Тышҡа сығармай бөтөрөү; тыйыу. *Күҙ йәшен йотоу.* ■ *Айбулат тамағына төйөлгән төйөндө йотоп, уларҙы (ҡатынын, балаларын) әүрәтте.* Һ. Дәүләтшина. / *күсм.* Тышҡа сығармай, эстә һаҡлау, белгертмәү. *Ни ҡәҙере йәберләнең, барыһын да йоттом мин* (Бәйеттән).

**3.** Үҙ эсенә һурыу, батырып, аҫта ҡалдырыу. *Һаҙ малды йота.* ■ *[Диңгеҙ] утрауҙарҙы йота. Ҡалалар һә тигәнсә төптә ҡала.* М. Кәрим. / Үҙенә һендереү, эскә алыу. *Тоҙ дымды йота. Үҫемлек тупраҡтағы азотты йота.*

**4.** *күсм.* Күңелһеҙ кисерешкә дусар булыу, баштан кисереү. *Ҡайғы йотоу. Хәсрәт йотоу.* ■ *Сеү, балам, сеү! Ят яныма, кил, икәүләп йоҡлайыҡ. Йоҡлайыҡ мәңге уянмай, юҡҡа михнәт йотмайыҡ.* Т. Йәнәби.

**5.** *күсм.* Юҡҡа сығарыу, юҡ итеү.— *Бөтә ҡыуанысымды, йыуанысымды, барлыҡ өмөтөмдө йотоп бөттөң.* З. Биишева. *Һуғыш .. ике йәш композиторыбыҙҙың аҫыл ғүмерен йотто.* Х. Әхмәтов. *[Сурағол:] Ҡауға һалып, мине йотмаҡ булһалар ҙа барыбер эш ҡыла алманылар.* Т. Хәйбуллин. *Хас дошмандар беҙҙе йотор ине, йоторҙар ҙа ине — дуҫтар күп* (Халыҡ йырынан).

**6.** *күсм.* Намыҫһыҙ юл менән үҙләштереү. *Кеше аҡсаһын йотоу. Кеше өлөшөн йотоу.* ■ *[Гәрәй — Сакайға:] Һин колхоздың күпме игенен йоттоң?* Б. Бикбай.

◆ **Ауыҙға [сәйнәп] ҡаптырғанды йота алмау** ҡулға ингәнде үҙләштерә алмағанда әйтелә. **Ел йотоу** *ҡар.* **ел. Ер йотҡоро** ҡарғағанда әйтелә. *Их, яуыз бай, ҡарун, ер йотҡоро!* Ғ. Хәйри. **Ер йотһон!** үҙ һүҙеңдә дөрөҫләү өсөн әйтелә.— *Алдаһам, ер йотһон, ана ҡояш!* Р. Низамов. **[Кеше] ашағанын йотоу** кеше ашағанда тамшаныу. *Ул [командир] ас. Һалдаттарҙың ашағанын йотоп ултыра.* Д. Юлтый. **Ҡан йотоу** *ҡар.* **ҡан** [1]. **Телде йоторлоҡ** бик тәмле тигән мәғәнәлә әйтелә. *Эй, сәйҙәрем, сәйҙәрем — телде йоторлоҡ ҡына.* К. Кинйәбулатова. **Телеңде йоттоңмо әллә** кеше өндәшмәгәндә әйтелә. **Тел өҫтөнә һалып йоторлоҡ** *шул уҡ* **ҡалаҡҡа һалып йоторлоҡ** (*ҡар.* **ҡалаҡ**).

**ЙОТТОРОУ** *к. йөкм. ҡар.* **йотоу** 1—4. *Һыу йоттороу. Дарыу йоттороу.*

◆ **Йән йоттороу** *ҡар.* **йән.**

**ЙОФАР** [1] *и. ҡар.* **йопар** [1].

**ЙОФАР** [2] *и. ҡар.* **йопар** [2].

**ЙОШ** *с. ҡар.* **юш.**

**ЙОША** *и. диал. ҡар.* **мышы** 1.

**ЙӨББӘ** [гәр.] *и. иҫк.* Муллаларҙың киң еңле оҙон кейеме. *Хәлфә башына бик шәп фәс, өҫтөнә өр-яңы йөббә кейгән.* М. Ғафури.

**ЙӨГАЯҠ** *и.* Урын йыйып ҡуя торған киң, тәпәшәк ширлек. *Көмөш сабып эшләнгән йөгаяҡ өҫтөнә урын йыйылып, нағышлы урын тартҡыһы төшөрөлгән.* Х. Ғәбитов.

**ЙӨГӨЛМӘ** *и.* Тояҡ араһы сейләнеп иҙелә торған мал ауырыуы.

**ЙӨГӨНДӨРӨҮ** *к. йөкм. ҡар.* **йөгөнөү** 1.

**ЙӨГӨНЛӘҮ** *к. диал.* Йөгөнөкләү. *Йөгөнләп ултырыу.*

**ЙӨГӨНӨКЛӘТЕҮ** *к. йөкм. ҡар.* **йөгөнөкләү.**

**ЙӨГӨНӨКЛӘҮ** *к.* Тубыҡты бөгөп ергә сәнсеү; тубыҡланыу. *Зилский .. йөгөнөкләп ултырып, ҡоҙаларға ҡымыҙ эсерә.* Ғ. Дәүләтшин. / *күсм.* Баш эйеү, теҙ сүгеү. *[Ҡормой:] Ир булһаң, баш эймә. Дошман алдында йөгөнөкләгән һайын елкәңә атланырҙар.* Б. Бикбай.

**ЙӨГӨНӨҮ** *к.* **1.** Тубыҡты ергә сәнсеү; йөгөнөкләү. *Аҫылбикә йөгөнә төшөп, йөҙө менән ҡарға ҡапланды.* Т. Хәйбуллин. / *күсм.* Баш эйеү, теҙ сүгеү; йөгөнөкләү. *Кеше алдына йөгөнөү. Ҡыйынлыҡ алдында йөгөнөү.* ■ *Нурый ..*

*балалар каршыһында йөгөнмәгәненә шатланды.* А. Таһиров.

**2.** Аяктан баҫа алмаҫ булыу (тояк араһы сейләнгән ауырыу малға карата).

**3.** *диал. кар.* **сырмалыу**[1] 2.

**ЙӨҘ**[1] **1.** Кеше башының алғы яғы; бит. *Матур йөҙ. Түңәрәк йөҙ. Йөҙгә карау. Йөҙҙө йәшереү.* ■ *Сәгиҙәнең .. йөҙө илауҙан кыҙаргайны.* М. Тажи. *Алһыу йөҙкәйҙәрем ай һаргайҙы күңелем тулы кайгы-уй менән.* (Халык йырынан). **Йөҙ түбән** йөҙ менән аҫка карап, капланып. *Йөҙ түбән ауыу. Йөҙ түбән ятыу.* **Йөҙ түбән килеү** йөҙ менән капланыу. / Сырай. *Көләс йөҙ. Якты йөҙ.* ■ *Үҙе бер ҙур поэма ине .. Сәйҙел йөҙөнә сыккан кисереш.* Ғ. Сәләм. **Асык йөҙ** алсак, мөләйем йөҙ; якты сырай. *Ул [Ғәли агай] кешене асык йөҙ менән каршы ала.* М. Ғафури.

**2.** Ниҙең дә булһа өҫкө яғы, өҫтө. *Икмәктең йөҙө.* ■ *Елән итәге аяк йөҙөнә төшөп тора.* М. Тажи. **Икмәктең йөҙө килеү** икмәктең өҫтө кыҙара биреп бешеү. *Әсәһе икмәк һалган һайын мейестең алдына гына .. камырҙан «тургай» эшләп ултырта, «тургай» әсикмәктән алдарак бешә һәм һаргайып йөҙө килгән, тешләгән сакта кыртышы кетерләп торган «тургай»ҙы Айнур бөтә ризыктан да тәмлерәк күреп ашай ине.* Н. Мусин.

**3.** Ниҙеңдер тышкы яҫылығы. *Кәкре йөҙ. Кубтың йөҙө. Конустың йөҙө.* / Ниҙеңдер киң өҫтө йәки күҙгә күренгән киңлеге. *Күк йөҙө. Һәр касан кыҙҙырһа көн диңгеҙ йөҙөн кайнарлатып, быу булып күккә оса ла һыу булып ергә төшә.* Ш. Бабич. *Тулган айҙың йөҙөндә көйәнтәле кыҙ бармы? Ана шул була ай кыҙы* (Әкиәттән).

**4.** Кырка торған нәмәнең үткер кыры. *Балтаның йөҙө. Бысактың йөҙө. Кылыстың йөҙө. Салгының йөҙө. Урактың йөҙө. Йөҙө кайтарылган.* ■ *Зәки .. бәкенең йөҙөн бармагы менән карап, сәсенә тейҙереп-тейҙереп алды.* В. Нафиков.

**5.** *күсм.* Ниҙеңдер төҫ биреп торған тышкы күренеше. *Газетаның йөҙөн матурлау.* ■ *Оҙонтауҙың йөҙө иҫ киткес үҙгәргән, шифер менән ябыулы яңы йорттар калкып сыккан.* «Совет Башкортостаны», 1978, 15 февраль. / Кемдеңдер шәхесе йәки ниҙеңдер төп булмышы. *Әҙәбиәттең йөҙө.* ■ *Ярлылар хәҙер һеҙҙең ысын йөҙөгөҙҙө күрҙе.* Ғ. Дәүләтшин.

**6.** 3-сө зат эйәлек һәм сығанак ялғауы менән бәйләүес функцияһында кулланыла (*кар.* **йөҙөнән**).

♦ **Донъя (йәки ер) йөҙө** тормош, донъялык. *Ярлы ла ярлы тимәгеҙ, ярлы хакын еймәгеҙ. Якты донъя йөҙөндә тыныс торам тимәгеҙ* (Кобайырҙан). **Ике йөҙлө** шартына карап төрлө һүҙле, төрлө кылыклы; ихлас түгел. *Алдыңда һине агартыр, артта кара ягыусы ике йөҙлө әҙәмдәр илгә терәк була алмаҫ.* «Юлай менән Салауат». **Йөҙ асылыу** рух, кәйеф күтәрелеп, сырайҙа шатлык сағылыу, йылмайыу күренеү. *[Бикмырҙаның] комһарган йөҙө аҙ гына асылып киткәндәй булды ла тиҙ үк киренән караңгы сырай алды.* Ф. Иҫәнғолов. **Йөҙгә кара яғыу** кеше алдында ғәйепте асыу, хурлау. **Йөҙгә кыҙыллык (йәки серкеү) килтереү** хурлыкка калдырыу, оятлы итеү. **Йөҙгә төкөрөү** *кар.* **төкөрөү. Йөҙҙө йыртыу** битәрләп каты һүҙ әйтеү. *Шундай тура һүҙле катын ул: сак кына хилафлык эшләнеңме — ситтәр алдында йөҙөңдө йыртам тимәҫ, таслатып әйтер ҙә һалыр.* Ш. Янбаев. **Йөҙҙән алыу** тура карап ғәйепләү. **Йөҙ итеү** хөрмәтләп кунак итеү. *[Хәйерниса:] Һыгым һуймагас, каҙы юк таһа, кунактарҙы нисек йөҙ итербеҙ икән?* Б. Бикбай. **Йөҙ күрһәтеү** кунак итеп, үҙеңде якындан таныштырыу. **Йөҙ кыҙарыу** оятка калыу. *Кеше алдында [Зәлифә] тыйнаклы, һүҙен дә үлсәп һөйләй... Уның менән бер ҙә йөҙөң кыҙармаҫ.* Ф. Рәхимғолова. **Йөҙ менән боролоу** иғтибар йүнәлтеү. *Беҙҙең бурыс: публицистика жанрына йөҙ менән боролоп, башкорт әҙәбиәтендәге төп жанрҙарҙың береһе кимәленә күтәреү.* «Ағиҙел», 1964, № 6. **Йөҙө ак булғыр** 1) якшы теләк менән әйтелә; 2) еңел генә орошканда әйтелә. *[Әхмәҙулла бабай:] Инәйең [кымыҙҙы] кәҙә һөтө менән шимләп маташкан. Боҙҙомо икән инде, йөҙө ак булгыр!* Ә. Вахитов. **Йөҙө(ң) кара** 1) әрләгәндә әйтелә. *Һай, йөҙөң кара, кеше канын эсеп тапкан малың аркаһында начальниктарҙы һыйлап, һугыштан калыуың етмәйме ни!* И. Көҫәпкол; 2) көнләшәү катыш һокланып әйтелә. *Сәрүәр шул егерме биштәр тирәһендә булдымы икән? Бик сибәр ине, йөҙө кара!* С. Кулибай. **Йөҙ(ө) кара койолоу** нык кайғырыу, бошоу. *Янһары йөҙө кара койолоп, өйөнә кайтып инә* (Әкиәттән). **Йөҙөн асыу** кемлеген фаш итеү. *Ошо карт, төпсөнә торгас, Корбановтың йөҙөн аскан.* Б. Бикбай. **Йөҙөн күрмәйем** асыуланып, карғағанда әйтелә. *[Үмәр:] Каты каргышым төшһөн, мәлгүнгә! Йөҙөн күрмәйем, кафырҙың.* Һ. Дәүләтшина. **Йөҙөнә карамаҫтай булыу** нык биҙеү. **Йөҙөн кара итеү (йәки кылыу)** хурлыкка калдырыу. *[Поп:] Эй илаһым, ҙур көҙрәтең, солтанатың менән дошмандарҙың йөҙөн кара кыл.* Т. Хәйбуллин. **Йөҙөң кара булғыр** әрләгәндә әйтелә. **Йөҙ сөйөү (йәки сөйөрөү)** баш тартыу. *Әллә, юкһа, улар үҙ идеалдарынан йөҙ сөйҙөләрме? Әллә, юкһа, улар кисәге дошмандарына кул бирҙеләрме?* И. Насыри. **Йөҙ сыйышыу** әрләшеү, талашыу. *[Миңһылыу:] Мин бында Исхак кулактар менән йөҙ сыйыштым.* К. Кинйәбулатова. **Йөҙ тотоу** йүнәлеш алыу. *Яңы тормошка йөҙ тотоу.* **Йөҙ түбән килеү (йәки капланыу)** юкка сығыу, дөмөгөү. *[Сурагол:] Хәби байҙың йөҙ түбән китеүе минең өсөн гәжәп түгел.* Т. Хәйбуллин. **Йөҙ һөртөү** түбәнселек менән баш эйеү. *Бары ла эйелеп ергә сәждә иттеләр, кул-аягын үптеләр, йөҙ һөрттөләр.* Ш. Бабич. **Йөҙ һыуы китеү** оятһыҙланыу. *Йөҙ һыуы китһә битеңдән, ул сакта эштәр харап!* С. Кудаш. **Йөҙ һыуын түгеү** оятлы булыу, түбәнһенеү. *[Һәүбән] өйҙән-өйгә йөрөп, йөҙ һыуын түгеп, һоранып көн күргән, ти.* «Акбуҙат». **Күҙе лә йөҙө** *кар.* **күҙ. Кара йөҙ** насар уйлы, яуыз, оятһыҙ. *Анау кәһәр һуккан кара йөҙҙәр һәләк иткән үгеҙҙе.* М. Тажи.

**ЙӨҘ**[2] *төп һ.* 100 һаны. *Йөҙгә тиклем һанау. Миңде йөҙгә бүлеү.* / Кем йәки нәмәнең 100-гә тиң иҫәбе. *Йөҙ баш мал. Йөҙ йыл. Йөҙ метр.*

*Йөҙ тонна. Йөҙ йәшәр карт. Йөҙгә етеү.* ■ *Ятып калған бер бәрәс йөҙ куй булып үрсер ер* (Кобайырҙан).

♦ **Йөҙ башы** элекке башкорт ғәскәрендәге 100 кешенән торған төркөм башлығы. *Kahым Колтубәнең погондарын өҙөп ташлай: «Бөгөндән һуң һин йөҙ башы түгел!»* Б. Бикбай. **Йөҙлө дисәтинә** *тар.* буйы йөҙ, иңе кырк таяклык ер.— *Хакын уның һиңә кыҫмам инде. Йөҙлө дисәтинәгә бер һум егерме тин куйырмын.* И. Көҫәпкол. **Йөҙ тапкыр (***йәки* **кабат, мәртәбә)** күп, бик күп. *Йөҙ мәртәбә әйтеү.*

● *Йөҙ һум аксаң булғанса, йөҙ дуҫың булһын.* Әйтем.

**ЙӨҘГӨР** *с.* Йөҙөүгә шәп.

**ЙӨҘГӨС** *и.* **1.** Балык йәки кайһы бер башка һыу йәнлектәренең йөҙөү өсөн кулайлашкан ағзаһы. *Балык йөҙгөсө.* / Кайһы бер һыу һөйрәлеүселәренең, коштарҙың, һөтимәрҙәрҙең (диңгеҙ ташбакаһы, пингвин, морж, тюлень һ. б.) үҙгәргән кыҫка ослоғо. *Тюлень йөҙгөсө.*

**2.** Йөҙөү өсөн аякка кейә торған ишкәк һымак кулайлама. *Йөҙгөс кейеү.*

**3.** *диал.* Калкыуыс.

**ЙӨҘГӘ-ЙӨҘ** *р. кар.* **кара-каршы.**

**ЙӨҘҘӨРӨЛӨҮ** *к. төш. кар.* **йөҙҙөрөү.**

**ЙӨҘҘӨРӨҮ** *к.* **1.** Койондороу өсөн һыуға төшөрөү, һыу индереү (малды). *Ат йөҙҙөрөү.* ■ *Кыҙрас ишәкте һыу буйына алып төшкән, якшы итеп йөҙҙөргән* (Әкиәттән).

**2.** Һыуҙа хәрәкәт иттереү. *Баланы һыуҙа йөҙҙөрөү.*

♦ **Үпкә йөҙҙөргәнсә** бик күп итеп (эсеү). *[Егет менән кыҙ] бер туя тамактарына ашайҙар, үпкәләрен йөҙҙөргәнсә сәй эсәләр* (Әкиәттән).

**ЙӨҘҘӘРСӘ** *сама h. кар.* **йөҙәрләгән.**

**ЙӨҘЛӨК**[1] *и.* **1.** Карындағы баланы уратып каплаған яры. *Йөҙлөк менән тыуыу.*

**2.** *диал. кар.* **битлек**[1].

**ЙӨҘЛӨК**[2] *и.* Аяктың йәки аяк кейеменең алкымдан түбәнге өҫтө. *Йөҙлөгөм көптәй булып шешеп киткән.* Н. Мусин. *Инеш һай, һыуы — йөҙлөктән, вак таштар ята ялтлап.* Ш. Бикkол.

**ЙӨҘЛӨК**[3] *и.* **1.** Урындыктың такта һалынған алғы буй ағасы. *Такта йөҙлөк. Буяулы йөҙлөк. Йөҙлөк буйы.* ■ *Закир .. урындык ситенә, йөҙлөккә барып ултырҙы.* З. Биишева.

**2.** Тәҙрәне уратып тыш яктан кағылған такта (ғәҙәттә семәрләп эшләнә). *Йөҙлөк куйыу. Семәрле йөҙлөк.*

**ЙӨҘЛӨК**[4] *и.* Икмәк һалғанда мейестең ауыҙына тартып куйылған куҙ.

**ЙӨҘЛӨК**[5] *и. һөйл.* Йөҙ һумлык кағыҙ акса. *Йөҙлөктө ваклау.*

**ЙӨҘЛӨЛӨК: ике йөҙлөлөк** ысын күңелдән булмаған хәл, кешенең һүҙе, эше менән ысын тойғоһоноң, карашының, ниәтенең ярашмауы. *Ике йөҙлөлөк күрһәтеү.*

**ЙӨҘЛӘГӘН** *сама h.* Йөҙ тирәһе, йөҙгә якын. *Йөҙләгән кеше. Йөҙләгән мал.*

**ЙӨҘЛӘНЕҮ**[1] *к. төш. кар.* **йөҙләү**[2]. *Кукуруҙы эсе йөҙләнгән траншеяла силослау.*

**ЙӨҘЛӘНЕҮ**[2]**: ике йөҙләнеү** ике йөҙлөлөк күрһәтеү. *Ике йөҙләнеп йөрөү.*

**ЙӨҘЛӘП** *сама h.* Йөҙ тирәһе, йөҙгә якын. *Йөҙләп кеше. Һигеҙ йөҙләп булыр.*

**ЙӨҘЛӘҮ**[1] *к.* Йөйҙө эскә бөкләп, икенсе катка һырыу. *Йөҙләп сығыу.*

**ЙӨҘЛӘҮ**[2] *к.* Ныклык, матурлык өсөн таш, такта йәки башка нәмә менән көпләү. *Кирбес менән йөҙләү.*

**ЙӨҘЛӘҮ**[3] *и.* Ныклык, матурлык өсөн тыштан капланған көп. *Мәрмәр йөҙләү.* ■ *Йәтим калған йорттарҙың йөҙләүҙәре купкан, ватык тәҙрәләренән ел ыжғыра.* Д. Исламов.

**ЙӨҘМӘ-ЙӨҘ** *р. кар.* **кара-каршы.**

**ЙӨҘМӘЛЕ** *с.* Йөҙөп, күпсен торған. *Тәлмәрйен тәңкәһе — йөҙмәле һыу үҫемлеге.*

**ЙӨҘӨК** *и.* Кашлы балдак. *Алтын йөҙөк. Көмөш йөҙөк. Борма йөҙөк. Йөҙөк кашы.* ■ *Алмас тимер менән яҙалар икән көмөш йөҙөктәрҙең каштарын* (Халык йырынан).

♦ **Ауыҙға йөҙөк кабыу** *кар.* **ауыҙ. Йөҙөк кашы урынына йөрөү** *кар.* **каш**[1]. **Йөҙөк өләшеү** оҙатылып килгәс, кәйенһеңле, бикәстәренә бүләк биреү. **Күмер (***йәки* **үгеҙ) йөҙөк** *йәки* **йөҙөк һалыш** йәштәр, балалар уйыны (күмәкләп теҙелеп ултыралар; бер уйын башы, бер «үгеҙ» була; «үгеҙ» ситтә тора, уйын башы кемдеңдер усына йөҙөктө йәшереп калдыра: «үгеҙ, йөҙөк кемдә?» — тип һорай; дөрөҫ әйтмәһә, «үгеҙ» бер йәшкә картая; дөрөҫ әйтһә, кире бер йәшкә йәшәрә; ун тапкыр картайғас, «яман үгеҙгә» әйләнә; барыһын да баҫтыра башлай; кемде тәүҙә тотһа, шул «үгеҙ» була).

**ЙӨҘӨМ** *и.* **1.** Йылы якта үҫә торған үрмәле емеш ағасы. *Кырағай йөҙөм. Йөҙөм баксаһы.*

**2.** Шул ағастың тәлгәш-тәлгәш булып үҫкән һутлы емеше. *Йөҙөм һуты. Йөҙөм йыйыу.* / Шул емештең махсус киптерелгән төрө. *Йөҙөмлө икмәк. Йөҙөм менән сәй эсәү.*

**ЙӨҘӨНСӨ** *рәт h.* Урын тәртибе 100 менән билдәләнгән. *Йөҙөнсө бит. Йөҙөнсө кеше. Йөҙөнсө йәш.*

**ЙӨҘӨНӘН** *бәйл. функцияһында* Төп килештәге исем йәки исем кылым формаһындағы һүҙҙән һуң килеп, берәй төрлө сәбәп, максатты белдерә. *Уйын йөҙөнән. Хөрмәт йөҙөнән. Шатлык йөҙөнән. Саминарҙа әйтелгән фекерҙәрҙе дөйөмләштереү йөҙөнән яҙылған мәкәлә.* ■ *Өйрәнсектең тиңһеҙ оҫталығына тәрән ихтирам йөҙөнән шунда ук ак мәрмәр өҫтөнә теге көршәктәрҙең береһен .. беркетеп ултырткандар.* З. Биишева.

**ЙӨҘӨҮ** *к.* **1.** Кул, аяк, тәнде кыбырлатып, һыуҙа хәрәкәт итеү. *Йөҙә белеү. Йөҙөп сығыу. Колас ташлап йөҙөү. Салкан йөҙөү.* / Төрлө кулайлашкан ағзалар ярҙамында һыуҙа хәрәкәт итеү (балык, һыу йәнлектәре һ. б. карата). *Егеткә һыуҙа йөҙөп йөрөгән бер алтын балык күренгән* (Әкиәттән). *Аккоштар күлде буйлап йөҙөп китте.* Ш. Бабич. / Һыу транспортында барыу. *Кәмәлә йөҙөп йөрөү. Пароходта йөҙөү.* ■ *Зәйнәп менән икәү йөҙөп бара улар кәмәлә.* Ғ. Сәләм. / Махсус кулайламалар ярҙамында һыу өҫтөндә йәки һыу аҫтында хәрәкәт итеү (кәмә, пароход һ. б. карата). *Пароход йөҙә.* / Һыу өҫтөндә тотолоп тороу, батмау. *Кыҙ һыу өҫтөнә караһа, бер үпкә йөҙөп йөрөй, ти* (Әкиәттән).

**2.** Һауала талғын ғына хәрәкәт итеү. *Зәңгәр күк бушлығында тулған ай йөҙөп йөрөй.* М. Тажи. *Көн әҙ генә болотло. Бөгәрләнеп-бөгәрләнеп болоттар йөҙә.* С. Агиш.

**3.** *күсм.* Тотош мансылыу, мас булыу. *[Бәндәбикә — Ерәнсә сәсәнгә:] Ҡымыҙҙа йөҙөп ҡунаҡ булдығыҙ. Ҡурай, уйнап күңел астығыҙ.* «Ерәнсә сәсән». *Шулай үткән йылдар, замандар, йөҙгән байҙар халыҡ ҡанында.* М. Сөндөклө.

**4.** *күсм.* Тотош бирелеү; сумыу. *Уйҙа йөҙөү. Хыялда йөҙөү. Шатлыҡта йөҙөү.* ■ *Өмөтһеҙлөктә йөҙгән, яна, көйә йөрөгән егеттәр ҙә юҡ түгел.* Т. Хәйбуллин.

♦ **Йөҙөп йәшәү** иркен, мул йәшәү. **Йөҙөп эшләү** күңел һалып, ихласлап эшләү. **Һай йөҙөү** *ҡар.* **һай** [1]. **Майҙа** (*йәки* **май эсендә**) **йөҙөү** *ҡар.* **май** [1].

**ЙӨҘӘ** *р. диал.* Бөтөнләй, шыпа. *Кургәҙмәлә ауылдың .. йөҙә малһыҙҙары, маллылары рәттән ҡуйылып, яҙылып бара.* Ғ. Дәүләтшин. *Ғирфан байҙың ҙур лавкаларын үткәс, йөҙә шашып ҡалдым.* Ғ. Ибраһимов.

**ЙӨҘӘНЕҮ** *к.* Ныҡ йонсоп, кәрһеҙ булыу. *[Бабай:] Ул карттар хәҙер йөҙәнеп, дүрт аяҡлап йөрөй* (Әкиәттән).

**ЙӨҘӘР** *бүл. һ.* Һәр бере йөҙҙән торған, йөҙгә тиң. *Йөҙәр һум аҡса тейеү.*

**ЙӨҘӘРЛӘГӘН** *сама һ.* Бер нисә йөҙ тирәһе, бер нисә йөҙгә яҡын. *Йөҙәрләгән кеше. Йөҙәрләгән мең.*

**ЙӨҘӘРЛӘП** *р.* Йөҙәре-йөҙәре менән. *Йөҙәрләп бүлеү.* ■ *Меңәрләп малды ҡыуҙылар, йөҙәрләп йәнде ҡыйҙылар; ил ағаһы ирҙәрҙең күҙенә ҡурғаш ҡойҙолар.* Салауат Юлаев.

**ЙӨҘӘТЕҮ** *к.* **1.** Ыҙа сиктереү, ыҙалатыу. *[Тимерғәле:] Йөҙәтте бит бынау биле, ҡорогор.* Һ. Дәүләтшина. *Ер һатылғас, бурысты түләтәләр, тамам шулай бөлдөрөп, йөҙәтәләр* (Бәйеттән).

**2.** Теңкәне ҡоротоу, аптыратыу. *Ҡуҙыйкүрпәс балаларҙың ығын, тубын талап йөҙәтә.* «Ҡуҙыйкүрпәс менән Маянһылыу».

**3.** *диал.* Оялтыу.

**ЙӨҘӘТКЕС** *с.* Ыҙа, яфа сиктереп, теңкәне ҡорота торған; йонсотҡос. *Ул арала йөҙәткес ваҡ ямғыр һибәләй ҙә башланы.* Д. Исламов.

**ЙӨҘӘҮ** [1] *к.* **1.** Ыҙа, яфа сигеү; йонсоу. *Тапманан йөҙәү. Юлдан йөҙәп ҡайтыу.* ■ *— Фәкирлек һаман артты. Ас-ялангас, ғазапланған, йөҙәгән һәм йәберләнгән халыҡ баш күтәрә.* Һ. Дәүләтшина.

**2.** Тәҡәтһеҙ булыу, аптырау. *Кинйә улы уҡты таба алмай йөҙәп бөткән* (Әкиәттән). *Бәйетемде ослай алмай йөҙәнем мин* (Бәйеттән).

**3.** *диал.* Оялыу. *Йөҙәп ҡалыу. Йөҙәп тороу.*

**ЙӨҘӘҮ** [2] *с.* Аслыҡтан, юҡлыҡтан хәлһеҙләнгән; йонсоу. *Йөҙәү булыу.*

● *Йөҙәүҙең йөҙөн йыртма.* Мәҡәл.

**ЙӨЗАФ** *с. ҡар.* **йозаф.**

**ЙӨЙ** *и.* **1.** Тегеп ҡуйған туҡыма, күн киҫәктәренең һ. б. тоташҡан урыны. *Күлдәк йөйө. Йөйҙән һүтелеү.* ■ *Буранбай .. һуғышҡа ҡаршы сығарылған прокламацияларҙы ла итек ҡунысына йөйҙәр араһына ҡыҫтырып алып ҡайта башланы.* Д. Юлтый.

**2.** Ниҙеңдәр өлөштәре тоташҡан урын. *Баш һөйәге йөйҙәре.* / *тех.* Деталь, ҡоролмаларҙың тоташҡан урыны. *Сварка йөйө. Заклепка йөйө.* / Хирургия операцияһы барышында туҡымаларҙы тоташтырған урын.

**3.** Ярапан ҡалған эҙ. *Һике йөҙләгәнә йығылып, уның [Зөфәрҙең] ирене китек булып ҡалғайны. Һалҡында шул йөй зәп-зәңгәр булып иренде икегә бүлеп тора.* Х. Ғиләжев. *Батырлыҡтың тамғалары тәҫлә тәнендәге яра йөйҙәре.* Ә. Вәли.

♦ **Йөйҙө алыу** *мед.* яра уңалғас, теккән ебен алыу. **Йөй һалыу** *мед.* махсус материал менән тегеп, яраның ситтәрен тоташтырыу. **Йөй ҡалдырмай эшләү** һиҙелерлек, беленерлек урын ҡалдырмай эшләү. **Йөйһөҙ ерҙән** (*йәки* **йомортҡанан**) **йөй эҙләү** юҡ ғәйепте эҙләү.

● *Йоморҡтала ғына йөй булмай.* Мәҡәл.

**ЙӨЙЛӘНЕҮ** *к.* Йөйө беленеү, йөйлө булыу. *Йөйләнеп ҡалыу. Яраның урыны йөйләнеп тора.*

**ЙӨЙЛӘҮ** *к. шул. ук* **йөй һалыу** (*ҡар.* **йөй**). *Йөйләп тегеү.*

**ЙӨК** *и.* **1.** Юл өсөн тейәлгән, йөкмәлгән нәмә. *Ауыр йөк. Йөк аты. Йөк машинаһы. Йөк бушатыу. Йөк тейәү. Йөк ташыу. Йөк һөйрәү.* ■ *Һалдаттарҙа йөк ауыр, .. елкәләренә күтәреп, ҡултыҡтарына ҡыҫтырып, ҡулдарына тотоп алып баралар.* Д. Юлтый. *Яҡын ара еңел йөккә егеп йөрөйҙәр уны [атты].* Ғ. Амантай. *Игенле йөктәр ҡаплаған элеваторҙар юлын.* Р. Ниғмәти.

**2.** Тейәп ташый торған нәмәне самаса үлсәү берәмеге. *Бер йөк бесән.* ■ *Аҡйелек .. алты йөк утын тейәгән дә ҡайтырға сыҡҡан* (Әкиәттән).

**3.** *күсм.* Өҫкә төшкән ауыр эш, ҡыйынлыҡ. *Һеҙҙең дә иңдәр күтәрҙе һуғыштың ауыр йөгөн.* Р. Ниғмәти. *Тормош йөгөн һалып иңемә, маңлай тирен һөртөп еңемә, үркәс-үркәс тауҙар артылдым.* С. Ғәбиҙуллин. / Мәшәҡәт, бимаза. *Кешегә йөк булыу.*

♦ **Өҫтән [ауыр] йөк төшөү** ниндәйҙер хәлдән, бурыстан ҡотолоп, еңеллек һиҙеү. *Улар сығып китте. Зәйнәп, өҫтөнән бер ауыр йөк төшкән һымаҡ, иркенләп тын алды.* Һ. Дәүләтшина. **Йөккә кереү** *диал.* бурысты, яуаплыҡты өҫкә алыу. *Кешенең йөгөнә кереп булмай.*

● *Ат күп булһа, йөк һыймай.* Мәҡәл. *Бер ҡунаҡ — шатлыҡ, ике ҡунаҡ — артыҡ, өс ҡунаҡ — йөк.* Әйтем.

**ЙӨКЛӨ** *с.* **1.** Йөк тейәлгән. *Йөклө арба. Йөклө сана.*

**2.** *һөйл.* Буйында балаһы бар; ауырлы. *Йөклө ҡатын.*

**ЙӨКЛӘМ** *и.* Йөкмәп алырлыҡ күләм. *Бер йөкләм бесән.*

**ЙӨКЛӘМӘ** *и.* Эш буйынса үҙ өҫтөнә алған йәки йөкмәтелгән бурыс. *Йөкләмә алыу. Йөкләмә ҡуйыу. Йөкләмә биреү.*

**ЙӨКЛӘНЕҮ** *к. ҡар.* **йөкмәтелеү.** *Беҙҙең өҫкә ҙур эш йөкләнә.* С. Агиш.

**ЙӨКЛӘП** *р.* Йөгө-йөгө менән. *Йөкләп ташыу. Йөкләп оҙатыу.*

**ЙӨКЛӘТЕҮ** *к.* Йөк (1 мәғ.) һалып күтәртеү.

● *Атыңды көсөнә күрә йөкләт.* Әйтем.

**ЙӨКЛӘҮ** *к.* **1.** Йөк итеп һалыу; артыу. *[Ҡыҙыларммеецтар] дөйәләрҙе сүктереп, өҫтәренә һыу мискәләре, бактар йөкләй.* А. Таһиров. **2.** *кар.* **йөкмәтеү** 1.

**ЙӨКМӘЛЕҮ** *к. төш. кар.* **йөкмәү** [1] 1. *Йөкмәлгән тоҡ.*

**ЙӨКМӘНДЕРЕҮ** *к.* Яурынына йөк күтәртеү; күтәрендереү. *Йөкмәндереп сығарып ебәреү.*

**ЙӨКМӘНЕҮ** *к.* Яурынға йөк һалып күтәреү; күтәренеү. *Йөкмәнеп китеп барыу. Йөкмәнеп ҡайтып инеү.*

**ЙӨКМӘТЕЛЕҮ** *к. төш. кар.* **йөкмәтеү.** *Йөкмәтелгән тоҡ. Йөкмәтелгән эш.*

**ЙӨКМӘТЕҮ** *к.* **1.** Яурынына һалып, кемгәлер күтәртеү. *Тоҡ йөкмәтеү.*

**2.** Үтәр өсөн кемгәлер тапшырыу. *Эш йөкмәтеү.* ■ *Бөгөнгө көн беҙгә йөкмәтә иң ҙур, ауыр, шанлы талабын.* Ғ. Амантай.

**ЙӨКМӘТКЕ** *и.* **1.** Ижад ителгән, яҙылған нәмәнең асылын тәшкил иткән эш-хәл, күренеш һ. б.; эстәлек. *Әҫәрҙең йөкмәткеһе. Һүрәттең йөкмәткеһе.* ■ *Хаттың бөтә йөкмәткеһе иҫкә төштө: мин унда һуғыш, ҡырылыш, аслыҡ тураһында яҙғайным.* Д. Юлтый.

**2.** *филос.* Күренеш йәки процестың асылын тәшкил иткән төп нигеҙ. *Йөкмәтке һәм форма. Әҙәби әҫәрҙең идея йөкмәткеһе. Милли формалы, социалистик йөкмәткеле культура.*

**ЙӨКМӘТКЕЛЕ** *с.* Йөкмәткегә, эске мәғәнәгә бай. *Бейеүҙәрҙең һәр береһе йөкмәткеле һәм халыҡсан.* Н. Иҙелбай.

**ЙӨКМӘҮ** [1] *к.* **1.** Иңгә алып күтәреү. *Бала йөкмәү. Тоҡ йөкмәү. Йөкмәп алып килеү.* ■ *Бер ваҡыт Ерәнсә сәсән баҙарҙан ҡайтып килә икән. Арҡаһына ҙур ғына тоҡ йөкмәгән.* «Ерәнсә сәсән».

**2.** *күсм.* Үҙеңдә яуаплы һанап, үҙ өҫтөңә алыу. *Ил бурысын йөкмәү.* ■ *Яҡшы аттарҙы беҙ екмәнек, донъя ауырлығын йөкмәнек* (Халыҡ йырынан).

**ЙӨКМӘҮ** [2] *и.* Иңгә алып күтәргән йөк. *Йөкмәүҙәрен аҫып килгән .. һигеҙ-туғыҙ кеше күренде.* К. Кинйәбулатова.

**ЙӨКСӨ** *и.* Йөк ташыусы. *Йөксөләр тоҡ тейәй.*

**ЙӨЛГӘ** *и. диал. кар.* **бәйге** 2.

**ЙӨЛДӘ** *и. диал. кар.* **бәйге** 2.

**ЙӨЛӨН** *и.* Умыртҡа һөйәгенең эсендәге йомшаҡ матдә; арҡа мейеһе

♦ **Йөлөн буйы** *диал.* умыртҡа.

**ЙӨМЛӘ** [*ғәр.*] *билд. а.* **1.** Бөтә, барлыҡ, бөтә булған. *Йөмлә кеше. Йөмлә халыҡ.* ■ *Мин күҙәттем ер йөҙөнөң йөмлә яйын фекер илә.* Ғ. Соҡорой.

**2.** *и. мәғ.* Бөтә халыҡ, күмәк төркөм. *Йөмләгә мәглүм булыу. Йөмләгә танылыу.* ■ *Үҙемде мәҙрәсәнең шәкерттәре йөмләһенә ингән кеүек хис итә башланым.* М. Ғафури.

♦ **Шул йөмләнән** *инш.* шуның эсенән, шул иҫәптән. *Был тәүге һуғышта дивизия, шул йөмләнән, беренсе полк, бик күп гитлерсыны ҡырҙы.* С. Әлибаев.

**ЙӨМҺҮР** [*ғәр.*] *и. иҫк. кит.* Халыҡ, йәмғиәт.

**ЙӨМҺҮРИӘТ** [*ғәр.*] *и. иҫк.* Республика. *Егерме бишенсе йылдың яҙында университетты бөтөп, үҙебеҙҙең йөмһүриәт мәркәзенә ҡайттым.* Ғ. Хәйри.

**ЙӨМҺҮРЛЕК** *и. иҫк.* Республика.

**ЙӨН** *и.* **1.** Тереклек, хайуандарҙың тәнен тотош ҡаплап торған сәс кеүек төктәр. *Ҡуйы йөн. Ҡалын йөн. Ҡыҫҡа йөн. Йөнө койолоу. Йөнөн ҡырҡыу.* / Кеше тәнендәге төктәр. *Битен йөн баҫҡан кеше.* **Бәпкә йөнө** кешенең тәнендәге ваҡ ҡына йомшаҡ йөн. *Йәнтимерҙең өҫкө иренендәге бәпкә йөндәре хәҙер мыйыҡ кеүек булып күренә.* С. Агиш.

**2.** Хайуандарҙан (һарыҡ, кәзә һ. б.) ҡырҡып алынған шул нәмә. *Кәҙгө йөн. Яҙғы йөн. Быймалыҡ йөн. Һарыҡ йөнө. Кәзә йөнө. Йөн тетеү. Йөн иләү. Йөндән кейеҙ баҫыу. // Йөн бейәләй. Йөн ойоҡ. Йөн юрған.*

**3.** Ҡоштоң мамығы менән ваҡ ҡауырһыны. *Ҡаҙ йөнө. Тауыҡ йөнө.*

♦ **Донъя көтөп, йөн тетеп йәшәү** *шаяр.* тыныс ҡына, имен генә йәшәү. **Йөндө ҡабартыу** асыуланып, ҡаршылыҡ белдереү. **Йөнөн тарау** аҡса, малын һығып алыу. *Әйҙә был байҙың йөнөн ныгыраҡ тарайыҡ, һарыҡты күберәк һуйҙырайыҡ.* Д. Юлтый. **Йөн табан** *кар.* **табан** [1]. **Йөн танау** *кар.* **танау. Йөн тибеү** эшһеҙ, бушҡа ваҡыт уҙғарыу. *Йөн тибеп йөрөү.*

● *Ике ҡош талашһа, уксыга — йөн.* Мәҡәл. *Ябалаҡтың йөнө күп, арыҫландың төгө күп.* Мәҡәл.

**ЙӨНГӘС** *с. диал.* Йөнтәҫ.

**ЙӨН-ЙОРҠА** *и. йыйн.* Төрлө йөн.

**ЙӨНҠЫРҒЫС** *и.* Малдың, ҡош-ҡорттоң йөнөн ҡырҡып, ашап йөрөгән бет.

**ЙӨНЛӨ** *с.* **1.** Йөн менән ҡапланған, йөн үҫкән (кешеләргә ҡарата). *Аяғы йөнлө. Күкрәге йөнлө.*

**2.** Йөнө күп, ҡуйы. *Йөнлө һарыҡ.*

**ЙӨНЛӘНЕҮ** *к.* **1.** Йөн (3 мәғ.) менән ҡапланыу; йөн сығыу. *Бәпкәләрҙең арҡа, муйыны йөнләнә башланы.*

**2.** *һөйл.* Йөн (2 мәғ.) һырып, йөнгә буялыу. *Кейеме йөнләнеп бөткән.*

**ЙӨНЛӘҮ** *к.* Ҡауырһын ҡуйыу (уҡҡа). *Кирәй уҡ яһап биреп тора, Бикә йөнләп тора, ти* (Әкиәттән).

**ЙӨНТӨР** *с. диал.* Йөнтәҫ. *Йөнтөр көсөк.*

**ЙӨНТӘЙ** *с. диал.* Йөнтәҫ.

**ЙӨНТӘЙЛЕҮ** *к. диал.* Йөнтәҫләнеү.

**ЙӨНТӘЙЛӘНЕҮ** *к. диал.* Йөнтәҫләнеү.

**ЙӨНТӘЛӘҮ** *к. диал.* **1.** Теткеләү.

**2.** Өҙгөләү, тартҡылау.

**ЙӨНТӘҪ** *с.* **1.** Йөн менән ҡапланған, йөн үҫкән. *Йөнтәҫ кеше.* / Өбөрөлө. *Йөнтәҫ балаҫ.*

**2.** Ҡуйы, ялбыр йөнлө. *Ҡашҡар, үҫеп еткәс, йәмһеҙ йөнтәҫ сәүеккә әйләнде лә ҡуйҙы.* З. Хисмәтуллин.

**ЙӨНТӘҪЛӘНЕҮ** *к.* Йөн менән ҡапланыу, йөнтәҫ булыу (кешегә ҡарата).— *Һин дә ҡырынып ал, бик йөнтәҫләнеп киткәнһең.* Б. Хәсән. / Өбөрөлөгә әйләнеү. *Шып-шыма ҡағыҙ юя торғас .. йөнтәҫләнеп бөттө.* С. Агиш.

**ЙӨНТӘҪЛӘҮ** *к.* Өбөрөлө, йөнтәҫ итеү. *Туҡыманы йөнтәҫләү.*

**ЙӨНТӘФЕЙ** *с. һөйл.* Булдыҡһыҙ, йүнһеҙ. *Булмаҫ былдай йөнтәфейҙе кантон башына ҡуймаҫтар.* И. Насыри.

**ЙӨНӘЙ** *с. диал. кар.* **остоҡай** 1, 2.

**ЙӨПЛӘТЕҮ** *к.* Ыңғайға һуҡтырып, ҡеүәтләтәү; дөрөҫләтеү. *Һуҙҙе йөпләтеү.*

**ЙӨПЛӘҮ** *к.* Ыңғайға һуғып, ҡеүәтләү; дөрөҫләү. *Ибраһимов һөйләгәндә халыҡ: — Эйе шул, эйе,— тип уның һүҙен йөпләп, баш ҡағып торҙо.* Ғ. Ғәйнуллин.— *Эшләмәгәс, тимерҙе ҡороп ултыртыу менән ни файҙа,— тип зарланып та алды.— Шулай инде, хәҙер ебәреп ҡалмаһаң, ҡасан ебәрәһең,— тип миң председателде йөпләп ҡуйған булдым.* Р. Солтангәрәев.

**ЙӨПЛӘШЕҮ** *к.* **1.** *урт. кар.* **йөпләү.**

**2.** *диал.* Яраҡлашыу.

**ЙӨРГӨНСӨ** *и.* **1.** Юлда барған кеше; үткенсе. *Йөргөнсөләр йәйге көндәрҙәге кеүек үк күп.* Х. Мохтар.

**2.** *иҫк.* Халыҡ исеменән низер юлларға ебәрелгән кеше; йөрөксө. *Крәҫтиәндәр йөргөнсөһө.*

**ЙӨРҘӘК** *с. диал.* Йөрөмтәл.

**ЙӨРӨК** *с.* Бик етеҙ, йылдам хәрәкәтле. *Болан мәхлүҡтары бик йөрөк, аңдыу менән кеше тота алмаҫ* (Халыҡ йырынан). *Торомтайҙан йөрөк ҡош булмаҫ* (Ҡобайырҙан). / Сабыуға, йүгереүгә шәп; йүгерек. *Йөрөк ат. // Тау һелкетеп бейей егеттәр, юл әйелтеп саба йөрөктәр.* С. Кулибай.

● *Эт йөрөгән төлкө һөймәҫ.* Мәҡәл.

**ЙӨРӨКЛӘТӘ** *р.* Аяҡ өҫтө йөрөгән көйө. *Ауырыуҙы йөрөкләтә үткәреү.*

**ЙӨРӨКСӨ** *и. иҫк.* Берәй йәмәғәт эшенә бәйле йомош менән ебәрелгән кеше. *Өфөлә ятҡан сағында уҡ йыйналып уға [Кирилловҡа] хат яҙҙылар. Үҙе менән һөйләшеп аңлашыу өсөн йөрөксөләр ебәрелде.* Ғ. Ибраһимов.

**ЙӨРӨКСӘН** *с. диал.* Йөрөмтәл.

**ЙӨРӨЛӨҮ** *к.* **1.** *төш. кар.* **йөрөү.** *Ҡалманы йөрөлмәгән сахра, урман, ҡул буйы.* Ш. Бабич.

**2.** *эйһ. ф. кар.* **йөрөү** 1—8. *Күп йөрөлгән. Бушҡа йөрөлдө.* ■ *Көн йылы саҡтарҙа нисек булһа ла йөрөлдө.* Н. Мусин.

**ЙӨРӨМ** *и.* Тереклек, иҫәнлек.

◆ **Йәй йөрөм** йәй буйы иркендә йөрөгән. *Йәй йөрөм ат.*

● *Кешенең үлемен теләгәнсә, үҙеңдең йөрөмөңдө телә.* Әйтем. *Яҡшыға йөрөм юҡ, яманға үлем юҡ.* Мәҡәл.

**ЙӨРӨМЛӨ** *с.* Алыҫ юлға арымай йөрөүсән; йөрөүгә шәп. *Бәләкәй башлы, йоҡа яңаҡлы ат йөрөмлө була.*

**ЙӨРӨМТӘК** *с. диал.* Йөрөмтәл.

**ЙӨРӨМТӘЛ** *с.* **1.** Бер урында сыҙамай, йөрөргә яратыусан. *Йөрөмтәл кеше.* ■ *Йылҡы көтөүсеһе өсөн иң ҡыйыны көҙ. Сөнки туҡ мал һайлана, йөрөмтәлгә әйләнә, артынан йүгереп кенә өлгөр.* Ҡ. Ибәтуллин.

**2.** Йөрөргә яратыусан; аҙғын.— *Эх, Фәғилә. .. Ул, ул .. үлгән кеше тураһында ауыр һүҙ әйтеүе лә ҡыйын инде, Фатима кеүек түгел инде ул, йөрөмтәл нәмә ине, йөрөмтәл.* Б. Бикбай.

**ЙӨРӨМТӘЛЛӘНЕҮ** *к.* **1.** Бер урында тормай эҙләнеп йөрөү, йөрөмтәлгә әйләнеү (малға ҡарата).

**2.** Аҙғынлыҡ юлына баҫыу, йөрөмтәлгә әйләнеү. *[Нәһиә — Фатимаға:] Ирҙе ир иткән дә ҡатын, хур иткән дә ҡатын. Бынан һуң ҡулыңда ҡаты тот был мутты. Тышаулап ҡуй, йөрөй алмаһын. Тағы ла йөрөмтәлләнә башлаһа, үҙемә әйт, бығаулашып бирермен.* И. Ғиззәтуллин.

**ЙӨРӨМҺӨҘ** *с.* Алыҫ юлға йөрөй алмай тиҙ арыусан; йөрөүгә насар. *Ҙур башлы ат йөрөмһөҙ була.*

**ЙӨРӨМҺӘК** *с.* Күп йөрөргә яратыусан. *Йөрөмһәк һыйыр малы. // Йөрөмһәктән юл ҡалыр, сәсәндәрҙән тел ҡалыр* (Ҡобайырҙан).

**ЙӨРӨМӘЛЕ:** **үҙе йөрөмәле** үҙ көсө менән йөрөй торған. *Үҙе йөрөмәле комбайн.*

**ЙӨРӨНӨҮ** *к.* Үҙ алдыңа тегеләй-былай йөрөү. *Тороп йөрөнә башлаһам, һиҙер тип ҡурҡам.* Д. Юлтый. *Зилский ары-бире йөрөнә.* Ғ. Дәүләтшин.

**ЙӨРӨТКӨС** *с.* Низелер хәрәкәткә килтерә торған. *Йөрөткөс тәгәрмәс.*

**ЙӨРӨТӨЛӨҮ** *к. төш. кар.* **йөрөтөү** 1—4, 6—9, 11, 14, 15. *Мал көтөүҙә йөрөтөлә. Машина менән йөрөтөлөү. Ошаҡ йөрөтөлөү. Көмөш йөрөтөлгән һауыт.*

**ЙӨРӨТӨҮ** *к.* **1.** Атлатып, хәрәкәт иттереү. *Алдан йөрөтөү. Атты йөрөтөп ашатыу. Саф һауала йөрөтөү.* ■ *Йәштәр, аттарҙы һыуытып алып килер өсөн, саналарға тейәлеп, урам буйына ат йөрөтөргә китте.* Ғ. Дәүләтшин. / Ҡайҙалыр барырға, йөрөргә мәжбүр итеү. *[Татлыбикә:] Кешене ашар ризығы, эсер һыуы йөрөтә.* Я. Хамматов.

**2.** Бер хәлдә тотмай ҡуҙғатыу; хәрәкәтләндереү. *Аяҡты йөрөтөү. Ҡулды йөрөтөү. Телде йөрөтөү.*

**3.** Ниндәйҙер сара ярҙамында хәрәкәт иттереү. *Ат менән йөрөтөү. Машина менән йөрөтөү.* ■ *Ҡарт баланы Сәғиҙәнән алып арбаға ултыртты ла йорт алдында бер-ике тапҡыр әйләнеп тартып йөрөттө.* М. Тажи.

**4.** Шахмат, шашка уйынында: бер урындан икенсе урынға шылдырыу, күсереү. *Пешканы йөрөтөү.*

**5.** Бер маҡсат менән ҡайҙалыр ебәреү.— *Әй Моратша ағай, һин ул түрәләрҙе буш ята тип уйлайһыңмы? Улар аҫтыртын кешеләр йөрөтмәй торалар тиһеңме?* Т. Хәйбуллин.— *Ҡунырға йөрөтмәҫкә кәрәк, ҡыҙ еткән инде хәҙер,— тине атаһы.* Һ. Дәүләтшина. / Бер маҡсат менән ҡайҙалыр алып барыу. *Ашҡа йөрөтөү. Балыҡҡа йөрөтөү. Магазинға йөрөтөү.* ■ *Беҙҙе ағас ҡырҡырға, юл, күпер, төҙәтергә йөрөтә башланылар.* Д. Юлтый. *Егерме ике йәшендә [Салауат] эйәртеп гәскәр йөрөткән, дошманының һөйәген табан аҫтында сереткән.* Р. Ниғмәти.

**6.** Хәрәкәткә килә торған нәмәгә идара итеү. *Комбайн йөрөтөү. Самолёт йөрөтөү. Троллейбус йөрөтөү.* ■ *Мин, бына икенсе йыл инде, ялан яғындағы бер колхоз баҫыуҙарында трактор йөрөтәм.* Н. Мусин.

**7.** Урындан-урынға алып йөрөү. *Өйрәнсек уларҙы [көршәктәрҙе] төрлө яҡҡа йөрөтөп һата.* З. Биишева. / *күсм.* Кешенән-кешегә тапшырыу, таратыу (һүҙҙе, хәбәрҙе һ. б.). *Ошаҡ йөрөтөү. Һүҙ йөрөтөү.* ■ *Халыҡ араһында ҡотҡо йөрөтөргә, юл күрһәтергә беҙҙең ҡулдан килер ине.* Д. Юлтый. *Ҡулдан-ҡулға йөрөтөгөҙ хатыбыҙҙы, уҡығанда иҫкә алың ашыбыҙҙы* (Бәйеттән).

**8.** Үҙеңдә алып йөрөү. *Кеҫәгә һалып йөрөтөү. Һаҡлап йөрөтөү.* ■ *Күкрәгендә, йөрәк янында ул йомарлаған байраҡ йөрөттө.* М. Кәрим. *Үҙең миңә булмаһаң да [бүләгеңдә] төҫөң итеп йөрөтөрмөн* (Халыҡ йырынан).

**9.** Өҫ-баштағы нәмәне берәй рәүешкә килтереп тотоу. *Сәсте оҙон йөрөтөү.* ■ *[Сәгиҙә:] Һеҙҙең ауыл ҡатындары итәген шулай [ҡыҫтырып] йөрөтәме әллә?* М. Тажи.

**10.** Уйҙа, иҫтә тотоу, күңелдә һаҡлау. *Күңелдә шик йөрөтөү.* ■ *Үткән йылда шулай агрономдың ошо Иҙел яры буйынан барғанда һөйләгән бер әкиәттен һаман йөрөтәм әле уйымда.* Ғ. Сәләм.

**11.** Уратып һыҙыу йәки һалыу. *Көмөш йөрөткән һауыт.* ■ *Болоттоң сит-ситтәре ҡыҙыл бутал йөрөткән кеүек алһыуланды.* Ж. Кейекбаев.

**12.** *күсм.* Нимәләр тураһында һүҙ, хәбәр алып барыу, һүҙҙе кем йәки нимәгәләр ҡайтарып ҡалдырыу. *Ул һаман һүҙен һыйыр һәм май тирәһендә йөрөтә башлағас, Шәхми инспекторға ҡарап күҙ ҡыҫты.* Т. Йәнәби.

**13.** Берәй исем менән аталыу. *Социалистик Хеҙмәт Геройы исемен йөрөтөү. Ленин исемен йөрөтә.*

**14.** Кем йәки нимә тип атау. *Элек Өфө ҡалаһы был яҡтан шунда тиклем генә булған. Ул заводтың был яғын хәҙер иҫке Өфө тип йөрөтәләр.* С. Агиш. *Шишмәгә ҡая битләп һығыла-бөгөлә һуҡмаҡ һуҙылған. «Ҡыҙҙар һуҡмағы» тип йөрөткәндәр уны.* З. Биишева.

**15.** Айырым исемдәр менән килеп, шул исемдән аңлашылған эште ғәмәлгә ашырыуҙы, башҡарыуҙы белдергән һүҙбәйләнеш яһай. *Үҙ-ара йомош йөрөтөү. Сауҙа йөрөтөү.* ■ *[Тимер:] Аҫтыртын эш йөрөтәләр, тиҙ генә эҙҙәренә төшөүе ҡыйын.* Б. Бикбай.

♦ **Ат йөрөтөү** *ҡар.* **ат**[1]. **Бармаҡ йөрөтөү** гел күрһәтмә генә биреү. **Күҙ йөрөтөү** *ҡар.* **күҙ. Фекер йөрөтөү** *шул уҡ* **аҡыл йөрөтөү (***ҡар.* **аҡыл). Хөкөм йөрөтөү** фекер итеү, ҡараш тотоу. *Килтерелгән мәғлүмәттәргә ҡарап хөкөм йөрөткәндә, быйыл эш насар түгел.* **Шайтан йөрөтөү** кешегә хөсөт биреү.

**ЙӨРӨҮ** *ҡ.* **1.** Аяҡҡа баҫыу, ҡуҙғалыу, атлау. *Йөрөп китеү.* ■ *Йөрөй ҙә башланым инде. Хәлем яҡшырҙы.* С. Агиш.

**2.** Аяҡ атлап, хәрәкәт итеү, хәрәкәттә булыу. *Алдан йөрөү. Аяҡ ослап йөрөү. Ныҡ баҫып йөрөү. Тороп йөрөү. Урамда йөрөү. Йөрөп килеү.* ■ *Ағас араһында ҡоро-һары шытырлай. Төндә ҡуяндар йөрөй.* Д. Юлтый. *[Зыя] һауала йөрөп ҡайтырға тип, урамға сыҒ[а].* М. Тажи. / Бер юл менән тәртип буйынса хәрәкәт итеү (транспортҡа ҡарата). *[Талип:] Районға машина йөрөймө? [Заман:] Оло юлға сыҡһаң, гөжләп тора.* Ш. Биҡкол.

**3.** Хәрәкәт итерлек хәлдә булыу, ҡуҙғалыу, хәрәкәтләнеү (тән ағзаларына ҡарата). *Ихласым юҡ, баҫмай аяҡ, йөрөмәй ҡул.* Ш. Бабич. *Ауыҙ эсендә тел йөрөй, тел осонда һүҙ йөрөй.* Салауат Юлаев.

**4.** Хәрәкәтләнеү, эшләү (төрлө механизмға ҡарата). *Мотор йөрөй. Сәғәт йөрөй.*

**5.** Ниндәйҙер сара ярҙамында хәрәкәт итеү. *Ат менән йөрөү. Машина менән йөрөү.* ■ *Юлдар урыны-урыны менән өҙөлөп ҡалды. Кеше бер ауылдан икенсе ауылға, түтәнән-түтәгә һуҡтырып, ҡалтағай менән генә йөрөй башланы.* М. Тажи. / Күңел асыу, ял итеү өсөн нимәләр ярҙамында хәрәкәт итеү. *Велосипедта йөрөү. Конькиҙа йөрөү.* ■ *— Кәмәгә ултырып йөрөргә дәртләнеп тора инем әлетим.* Т. Йәнәби.

**6.** Сират буйынса шылдырып йәки сығарып ҡуйыу (уйында). *Пешка менән йөрөү. Туз менән йөрөү.* ■ *[Самат икенсе шахматсыға:] Йөрөнөңмө? Әһә, унда йөрөгәнһең икән.* З. Хисмәтуллин.

**7.** Бер маҡсат менән ҡайҙалыр барыу. *Донъя гиҙеп йөрөү. Ситтә йөрөү. Эшкә йөрөү.* ■ *Мин ҡайын туҙынан яһалған түйыс менән еләккә йөрөгәнемдә әле булһа һағынам.* В. Нафиҡов. *Киң илебеҙ менән һоҡланып, Сәйҙел, Зәйнәп йөрөп ҡайтты шулай.* Ғ. Сәләм.

**8.** Урындан-урынға ҡыҙырыу. *Өйҙән-өйгә йөрөү.* ■ *Уны [Зиннәтте] төйәкләнә алмай, ил өҫтөндә йөрөү еләткән.* Ф. Иҫәнғолов. / *күсм.* Кешенән-кешегә таралыу (һүҙ, хәбәр кеүеккә ҡарата). *Һалдаттар араһында төрлө хәбәр йөрөй башланы.* Д. Юлтый.

**9.** Ҡайҙалыр күп тапҡырҙар булыу, кем менәндер йыш аралашыу. *Айбулат күп йыл буйы рус араһында йөрөп, русса һөйләшергә бик яҡшы өйрәнгән.* Һ. Дәүләтшина.— *Комсомол башың менән йыйын һатыусылар араһында йөрөйһөң.* С. Агиш. / Күпмелер ваҡыт ҡайҙалыр булыу йәки ваҡытлыса тороу, йәшәү. *Партизанда йөрөү. Һалдатта йөрөү. Йәй буйы ауылда йөрөү. Көн буйы эштә йөрөү.* ■ *Уның [Ямалдың] йәшлеге батраклыкта йөрөп үткән.* М. Тажи. / Тереклек итеү, көн итеү; йәшәү. *Буйҙаҡ йөрөү.* ■ *Зөләйха, һин ерҙә йөрөгән хур ҡыҙы, күҙҙәреңдә яна күктең йондоҙо.* Салауат Юлаев. *Һыу һипмәгән гөлдәр кеүек, йөрөйөм яныпкөйөп* (Халыҡ йырынан). / *һөйл.* Берәй вазифаға бәйлә эш башҡарыу. *Монтёр булып йөрөү.*

**10.** *күсм.* Кем менәндер ғишыҡлы мөнәсәбәттә булыу. *Сафа ҡарттың Ғабдуллаһы Сәхәп муллаһың ҡыҙы менән йөрөй, тигән хәбәр китте.* Д. Исламов.

**11.** Үҙендә бергә булыу, үҙең менән бергә булыу. *Кеҫәһендә кәләм йөрөй.* ■ *Эй, рус ере! Ҡайҙа атлаһаҡ та, һин йөрөйһөң беҙҙең күңелдә.* Р. Ниғмәти. / Кемдеңдер ҡулында булыу, кемдәләр һаҡланыу. *[Сурагол:] Тукта, иртә менән байҙың үҙенә инәйем дә ун ике йыл буйы йөрөгән хаҡымды һорайым.* Т. Хәйбуллин.

**12.** Ғәмәлдә булыу, ҡулланылыу. *Элекке ҡағыҙ акса хәҙер йөрөмәй.* ■ *Большевиктар әйтә, был донъяла ярлы халыҡ хөкөмө йөрөһөн, тип.* Ш. Бабич. / Баһаға ҡуйылыу, баһаланыу. *Кеш тиреһе ни тиклем ҡарараҡ булһа, шул тиклем ҡәҙерле була, хаҡы ла юғары йөрөй.* Ҡ. Фәхретдинов.

**13.** Кем йәки нимәләр булып иҫәпләнеү, һаналыу. *Паспорт буйынса мин буйҙаҡ булып йөрөйөм.* ■ *Уның атайым тип йөрөгән кешеһе әҙәм затынан түгел, ә дейәү бәрейе затынан булған* (Әкиәттән).

**14.** *-ып/-а* формаһындағы хәл ҡылым менән

ярҙамлыҡ ҡылым сифатында килеп, эш-хәл йәки хәрәкәттең рәүешен йәки дауамлылығын белдергән ҡушма ҡылым яһай. *Бейеп йөрөү. Илап йөрөү. Атлап йөрөү. Йөҙөп йөрөү. Күсеп йөрөү. Ҡасып йөрөү. Ҡыҙырып йөрөү. Сабып йөрөү. Сығып йөрөү. Тәгәрләп йөрөү. Һикереп йөрөү. Эркелеп йөрөү. Әйләнеп йөрөү. Йүгереп йөрөү. Ашап йөрөү. Көлөп йөрөү. Ҡайтып йөрөү. Ҡарап йөрөү. Йырлап йөрөү. Ҡаңғырып йөрөү. Ҡатнашып йөрөү. Уйнап йөрөү. Уҡып йөрөү. Һөйләп йөрөү. Һыуһап йөрөү. Шаулап йөрөү. Эшләп йөрөү. Яратып йөрөү.*

**15.** *-рға / -рғә* формаһындағы ҡылым менән ярҙамлыҡ ҡылым сифатында килеп, билдәле маҡсатты үтәүгә әҙерләнеү мәғәнәһен белдерә. *Алырға йөрөү. Бирергә йөрөү. Күсергә йөрөү.* ■ *Төшөмдө кире алырға йөрөйөм, бабай,— тип әйтте, ти, егет* (Әкиәттән).

♦ **Алып йөрөү** бергә йөрөтөү. *Ашҡа алып йөрөү. Эшкә алып йөрөү.* **Артынан йөрөү** кем йәки ни менәндер ныҡ мәшғүл булыу. *Ҡунаҡ артынан йөрөү. Эш артынан йөрөү.* **Ары йөрө!** кемделер эргәнән ҡыуғанда әйтелә. *Бар, ары йөрө!* **Ат башында йөрөү** *ҡар.* **ат**[1]. **Етәктә бау өҙмәй йөрөү** *ҡар.* **етәк. Йөҙөп йөрөү** бөтә ихласлыҡты биреү; кинәнеү (эштә). *Йөҙөп йөрөп эшләү.* **Күтәреп алып йөрөү** *ҡар.* **күтәреү. Маҡтап** (*йәки* **һөйләмәй) йөрөйһөң** ашарға ултырыр алдағына килеп ингән кешегә әйтелә. *[Ҡатын:] һөйләмәй генә йөрөйһөгөҙ икән, табындың уртаһына тап килдегеҙ.* М. Тажи. **Юл йөрөү** юлда, сәфәрҙә булыу. *[Ҡамыр батыр:] Атай, миңә сукмар ҡойҙор, булат ҡылыс һуҡтыр. Улар миңә юл йөрөгәндә кәрәк була* (Әкиәттән). **Яманлап** (*йәки* **һөйләп) йөрөйһөң** ашап бөткәс кенә килеп ингән кешегә әйтелә.

● *Йөрөй белмәгән кеше аттың арҡаһын тишер, саба белмәгән кеше ҡолағын киҫер.* Әйтем. *Йөрөгән аяҡҡа йүрмә эләгә.* Мәҡәл. *Йөрөгән-йөрөгән дә, өйөнә еткәс, йүгергән.* Әйтем. *Елгән ел күргән, йөрөгән ил күргән.* Мәҡәл. *Һүҙ эйәһе менән йөрөмәй.* Әйтем. *Эт өрөр, бүре йөрөр.* Мәҡәл.

**ЙӨРӨШ** *и.* **1.** Кеше йәки йәнлек, хайуандың үҙ аяғы менән хәрәкәте. *Йөрөштө тиҙләтеү. Йөрөштө әкренәйтеү.* ■ *Аҡтүбә дөйә йөрөшө менән өс көнлөк юл алыҫлығында тороп ҡалды.* Ғ. Ғүмәр. *Йәш ҡар саңғыларҙы тота. Шулай ҙа Хашимов йөрөшөн әкренәйтмәне, алдан юл һалып барҙы ла барҙы.* Б. Бикбай. / Транспорт сараһының бер урындан икенсе урынға хәрәкәте. *Индрил .. паровоздарҙың көслө хәрәкәттәрен, йөрөштәрен ҡарап ултырырға ярата.* Д. Юлтый. *Пароход мороно менән аҡ түлҡындарҙы яра-яра, йөрөшөн шәбәйткәндән-шәбәйтә.* М. Тажи. / Шыйыҡлыҡтың, газдың һ. б. төрлө көпшә, торба, ҡан тамырҙары буйлап таралыу хәрәкәте. *Тән сымырлап, тамырҙарҙа ҡан йөрөшө туҡтап ҡалғандай була.* Ә. Чаныш.

**2.** Атлау рәүеше. *Еңелсә йөрөш. Һалмаҡ йөрөш.* ■ *[Тимергәлә:] Бына әле һинең артыңдан ҡарап килдем дә: йөрөшөң хас атайыңдыҡы.* Һ. Дәүләтшина.

**3.** Уйнаусының сираттағы сығышы (шахмат, шашка һ. б. уйынында). *Бик дөрөҫ йөрөштәр менән аҡтар ҡараларҙы ҡыҫырыҡлап еңә.*

**ЙӨРӨШЛӨ** *с.* Йөрөшө (1 мәғ.) ырамлы. *Тиҙ йөрөшлө поезд.*

● *Атың йөрөшлө булһа, тояҡҡа ҡөс; ҡатының тауышлы булһа, ҡолаҡҡа ҡөс.* Әйтем.

**ЙӨРӨШЛӘТЕҮ** *ҡ.* Ваҡ-ваҡ ҡына, еңел баҫтырып, шәп атлатыу (атты).

**ЙӨРӨШЛӘҮ** *ҡ.* Ваҡ ҡына, еңел генә баҫып, шәп атлау (атҡа ҡарата). *Ат йөрөшләп бара.*

**ЙӨРӨШӨҮ** *ҡ.* Бер-береңә барып йөрөү. *Ҡунаҡҡа йөрөшөү. Сәйгә йөрөшөү.* / Аралашыу, ҡатнашыу. *[Гөләйшә:] Етембай ҙа булдымы йөрөшөр кеше.* М. Хәйҙәров.

**ЙӨРӨШ-ТОРОШ** *и.* Кешенең үҙен тотоу рәүеше, йөрөшө, ҡылығы. *Ул [Гөлниса] яуаплы хеҙмәткәр булып алғас, йөрөш-торошон бөтөнләй ирҙәргә оҡшатып ебәрҙе.* З. Биишева.

**ЙӨРӨШТӨРӨҮ** *ҡ.* Ары-бире йөрөү, бер тегеләй, бер былай йөрөү. *Урамда йөрөштөрөп килеү.* ■ *[Сәгиҙә] урынынан тороп, ишекле-түрле иҙән буйлап йөрөштөрҙө. Унан өҫтәл янына ултырҙы.* М. Тажи.

**ЙӨРӨШҺӨҘ** *с.* Йөрөшө (1 мәғ.) ырамһыҙ. *Йөрөшһөҙ ат.*

**ЙӨРЬӘТ** [*ғәр.*] *и. иҫк. кит.* Батырлыҡ, ҡыйыулыҡ. *Хоҙайға илап теләймен теләк: беләккә кеүәт, йөрәккә — йөрьәт.* Ш. Бабич.

□ **Йөрьәт итеү** *шул уҡ* **батырсылыҡ итеү** (*ҡар.* **батырсылыҡ). *Һүҙ әйтергә йөрьәт итеү.*

**ЙӨРӘК** *и.* **1.** *анат.* Кешелә күкрәк ҡыуышлығының һул яғында урынлашып, ҡан әйләнешен тәьмин итә торған мускуллы ҡапсыҡ кеүек үҙәк ағза. *Йөрәк тибеше. Йөрәк ауырыуы. Йөрәк дарыуы. Йөрәк ҡыҫылыу.* ■ *[Гөлсөмдөң] йөрәге дарҫлап тибә, ике бите ут булып яна.* Ф. Иҫәнғолов. *Йомшаҡ, йылы, иркә май һауаһы — талған йөрәктәрҙең дауаһы.* Ғ. Амантай. **Йөрәк алды** йөрәктең өҫкө ике бүлкәһенең береһе. **Йөрәк ҡапҡасы** йөрәктә ҡандың ирегә йөрөшөн бикләп торған өлөшө. **Йөрәк ҡарыны** (*йәки* **ҡыуышы**) йөрәктең аҫҡы ике бүлкәһенең береһе. **Йөрәк көбө** (*йәки* **күлдәге, ҡабы**) йөрәкте тыштан ҡаплаған яры. **Йөрәк тотоу** ҡапыл йөрәк ауыртыу. **Йөрәк ярылыу** *һөйл.* 1) йөрәк шартлау. *Ауһам ине шул саҡ бәйгеләрҙә йөрәге ярылып үлгән ат һымаҡ.* М. Кәрим; 2) *күсм.* бик ныҡ ҡурҡыу.

**2.** *күсм.* Кешенең эске донъяһы, эске сифаты һәм хис-тойғолары; күңел. *Йөрәк йылыһы. Йөрәк сере. Йөрәк тойғоһо. Йөрәк тыныслығы. Йөрәк ҡушҡан эш. Йөрәк елкенеү.* ■ *Ишеткәндә моңло ҡурайҙарың, йөрәгемә моңдар бөркөлә.* Ш. Бабич. *Салауат та батыр илдән киткәс, йөрәктәрҙе баҫты зар-һағыш* (Халыҡ йырынан). **Йөрәккә ҡаҙалыу** күңелгә ауыр тойғо, әрнеү һалыу. *Әйткән һүҙе йөрәгемә ҡаҙалды.* **Йөрәккә таш булып ултырыу** күңелгә бик ауыр, ҡыйын булыу. *Һүҙе йөрәгемә таш булып ултырҙы.* **Йөрәк ҡыҫылыу** ауыр хискә тулышыу. *Сал сәстәренә, һурылған йөҙҙәренә ҡарап, Кәрим әсәһен йәлләне, йөрәге ҡыҫылды.* Я. Хамматов.

**3.** *әйл. ф.* **йөрәгем** Ҡәҙерле күргән яҡын кешегә иркәләп, яратып әйтелә. *Ултырһана, йөрәгем, бер үбәйем, бер үптереп ҡалдым тиерһең* (Халыҡ йырынан).

♦ **Арыҫлан йөрәкле** бик ҡыйыу, ҡурҡыу белмәҫ кешегә ҡарата әйтелә. **Бөтә йөрәктән** ысын күңелдән, йән-тән менән. *Бөтә йөрәктән ғашиҡ булыу.* **Йөрәк асыу** асығыу. **Йөрәк баҫылыу** *йәки* **йөрәкте баҫыу** тынысланыу. *Йөрәгем баҫылғанса иланым.* Б. Ишемғол. **Йөрәк башы** *шигр.* иң нескә тойғоно, иң ҡәҙерле нәмәне белдереп әйтелә. *Илкәйемде һағынып илай-илай йөрәк башҡайымды һары алды* (Халыҡ йырынан). **Йөрәк болғаныу** *шул уҡ* **күңел болғаныу** (*ҡар.* **күңел). Йөрәк дерелдәү** ҡурҡыу. *Был юлдан үткән ваҡытта, йөрөк дерелдәй ине.* С. Кулибай. **Йөрәк етеү** *шул уҡ* **батырсылыҡ итеү** (*ҡар.* **батырсылыҡ).** *[Тау эйәһе — егеткә:] Нисек йөрәгең етеп, минең байлыҡты алырға килдең?* (Әкиәттән). **Йөрәк ите** 1) иң ҡәҙерле кеше (ғәҙәттә балаға ҡарата әйтелә); 2) аттың тояғы аҫтындағы йомшаҡ ит; тояҡ мендәре. *Йөрәк итенең шешеүе.* **Йөрәк итен ашау** (*йәки* **телгеләү**) йәнде әрнетеү, бик ныҡ ҡайғыртыу. **Йөрәге күкрәгенә һыймай** ныҡ ярһығанда, ашҡынғанда әйтелә. **Йөрәккә инеү** йылы һүҙ менән ышаныс, хөрмәт ҡаҙаныу; эс-бауырға инеү. *Сәгиҙә ҡыҙҙарға яҡынайырға, йөрәктәренә инергә тырышты.* М. Тажи. **Йөрәккә йылы инеү** *шул уҡ* **эскә йылы инеү** (*ҡар.* **йылы). Йөрәккә йәбешеү** ҡапыл ауыр булып китеп, үҙендә насар тойоу. *Боҙоҡ кымыҙҙы эсһәң, йөрәккә йәбешә.* М. Ғөбәйҙуллин. **Йөрәккә ҡан һауыу** ауыр ғазап-ҡайғынан тәҡәтһеҙ булыу. **Йөрәккә май ҡуныу** көс-хәл алыу, нығыныу. *Тәненә ит үрмәй, йөрәгенә май ҡунмай, бауыр һөйрәп ыҙа сиккән Ҡусәрбай ҡусты ла беҙҙән китте.* Т. Хәйбуллин. **Йөрәккә төшөү** бик ныҡ яфалау, интектереү; үҙәккә үтеү. *Ҡулымдың һыҙлауы йөрәккә төшә.* **Йөрәккә сыҙамау** нимә эшләргә белмәй, ғазап-ҡайғынан ыҙаланыу. **Йөрәккә ут һалыу** ярһытыу, елкендереү. *Батыр егет, Алпамыша, йөрәгемә ут һалдың.* «Алпамыша». **Йөрәккә ял булыу** рәхәтлек, тыныслыҡ килеү. *[Мәскәй — егеткә:] Ошоно эсһәң, йөрәгеңә ял булыр, ҡайғың баҫылыр* (Әкиәттән). **Йөрәккә ятыу** күңелгә хуш килеү, оҡшау. *Ислах хәҙрәттең һүҙе уның [Ғарифтың] йөрәгенә ятты.* Ғ. Хәйри. **Йөрәк ҡабыныу** ниндәйҙер көслө тойғо менән әҫәрләнеү. *Шатлыҡтан йөрәк ҡабыныу. Ҡурҡыуҙан йөрәк ҡабыныу.* **Йөрәк ҡағыу** ашҡынып ярһыу, елкенеү. *Йөрәк ҡағып, аҡбуҙ килә, саба-елә, саба-елә.* М. Кәрим. **Йөрәк ҡаны** иң ғәзиз, иң саф нәмә тураһында әйтелә. *Йөрәк ҡанын ағыҙып, һыҡрай-һыҡрай, шулай йөрөнө Зәйнәп йыл буйы.* Ғ. Сәләм. **Йөрәк ҡатыу** *шул уҡ* **күңел ҡатыу** (*ҡар.* **күңел). Йөрәк ҡубыу** бик ныҡ ҡурҡыу. *Ҡыҙылдар менән аҡтар һуғышы ваҡытында йөрәге ҡубып бөткән Нәбирә ҡурҡа-ҡурҡа ғына ишек эргәһенә барҙы.* Н. Мусин. **Йөрәк ҡырҡылыу** ит, майлы ризыҡ ашамай асҡаҡланыу, хәлһеҙләнеү. **Йөрәк ҡәғбәһе** *ҡар.* **ҡәғбә** 2. *Салауат — Урал балаһы, Салауат — йөрәк ҡәғбәһе.* Ш. Бабич. **Йөрәк майы һыҙлау** (*йәки* **һыҙыу)** ниндәйҙер тойғо кисереп әрнеү, һыҙланыу. **Йөрәк өҙөлөү** 1) бик ныҡ асығыу. *Йөрәк өҙөлөп, түҙер хәл ҡалмағас, йәшел үлән өҙөп ҡабабыҙ.* Д. Юлтый; 2) нимәлер уйлап әсенеү; әрнеү. *Өҙөлә йөрәк артыҡ һағынғас* (Халыҡ йырынан). **Йөрәк өшөү** *ҡар.* **өшөү** 3. **Йөрәк параһы** *ҡар.* **пара. Йөрәк сығыу** 1) көслө тойғонан ярһыу. *Минең йөрәгем сығып бара, урынымда ултыра алмайым.* Ғ. Дәүләтшин; 2) алдан бәлә һиҙеп, түҙемһеҙләнеү. *[Сәйҙеямал:] Әллә ниңә иртәнән бирле йөрәгем сыға, эсем боша.* Я. Хамматов. **Йөрәкте алыу** ныҡ ҡурҡытыу; ҡотто алыу. *Биктимер һаҡсыларҙың йөрәген ала, улар бөтөнләй ҡаушап төшәләр* (Әкиәттән). **Йөрәкте асыу** эске серҙе белдереү. *[Ғәбделхәй] миңә йөрәген асты, бөтәһен дә һөйләп бирҙе.* Ғ. Әмири. **Йөрәкте баҫыу** тынысланыу, тынысландырыу. *Ауыр саҡтарҙа йыр менән йөрәгемде баҫам.* **Йөрәкте ҡуҙғатыу** тыныслыҡты алыу, болоҡһотоу. *Сания бер күреүҙә йөрәгемде ҡуҙғатты.* Н. Мусин. **Йөрәкте өҙөү** ниндәйҙер хис уятып әсендереү; әрнетеү. *Ирекле ҡоштарҙың кинәнеп һайрашыуы [биктә ултырған] Гөйлөҙөмдөң йөрәген өҙҙө. Ул тағы ла уйға ҡалды.* Һ. Дәүләтшина. **Йөрәкте талау** *ҡар.* **талау** [1]. **Йөрәкте ус төбөнә алыу** ныҡ ҡурҡыуға төшөү. **Йөрәкте ярыу** ныҡ ҡурҡытыу. **Йөрәк түрендә** (*йәки* **төбөндә) һаҡлау** (**тотоу** һ. б.) иң ҡәҙерле, изге нәмә итеп, онотмай, күңелдә тотоу. **Йөрәк ултыртыу** боронғо йола буйынса, ҡурҡып ауырыған кешене имләү. **Йөрәк урынында** түгел күңел тыныслығы юҡ, борсоулы. *[Хәйруш:] Юҡ, Фәйруш, йөрәк бер ҙә урынында түгел. [Фәйруш:] Тыныслан, һүҙҙе туҡтатайыҡ.* Ҡ. Даян. **Йөрәк һарыуы** тәрән ҡайғы, зар. **Йөрәк һурылыу** 1) ныҡ асығып, ашағы килеү. *Йөрәгем һурылып килә, бик асыҡтым;* 2) ныҡ борсолоу. **Йөрәк шыу** (*йәки* **жыу) итеү** ҡапыл ҡурҡып, ҡаушап ҡалыу, ҡойолоп төшөү. *Көтөлмәгән был хәбәрҙе ишеткәс, Айбикәнең йөрәге шыу итеп ҡалды.* И. Көҫәпҡол. **Йөрәк ялғау** *шул уҡ* **тамаҡ ялғау** (*ҡар.* **тамаҡ). Йөрәк ялҡыны** шашып торған көслө хис. *Йөрәк ялҡынына түҙә алмау.* **Йөрәк яныу** уй, хәсрәттән үртәнеү. *Эскенәйең бошоп, йөрәгең янһа, йырлап ала торған йола бар* (Халыҡ йырынан). **Йөрәк яраһы** ниндәйҙер ауыр хәл, фажиғәнең ныҡ рәнйеткән, әрнеткән ауыр шауҡымы, эҙе. *Күпме ваҡыт үтеп киткән, ә йөрәк яраһы һис кенә лә уңалмаған.* З. Биишева. **Йөрәк ятыу** кем йәки нимәнелер оҡшатыу, ярашлы тип табыу. *Эшкә йөрәк ятмай.* **Ҡайнар йөрәк(ле)** ҡайнар хисле, дәртле. **Ҡара йөрәк(ле)** ҡаты күңелле, бәғерһеҙ, яуыз. **Ҡуш йөрәк(ле)** ҡурҡыу белмәгән ҡыйыу кешегә ҡарата әйтелә. *Ауылда бағыр, ҡуш йөрәкле кешеләр йәшәгән.* Ә. Вахитов. **Ҡуян йөрәк(ле)** ҡурҡаҡ кешегә ҡарата әйтелә. **Таш йөрәк(ле)** ҡаты күңелле, бәғерһеҙ. **Туң йөрәк(ле)** хис, тойғо менән әҫәрләнә белмәгән, янмаған. **Үлгән** (*йәки* **һүнгән) йөрәк** хисһеҙ, дәртһеҙ. *Таш ҡолаҡ, үлгән йөрәк, туңған баштар моңлоға моңаймаҫ та, бойоҡмаҫ та.* Ш. Бабич.

**ЙӨРӘК-БАУЫР** *и.* **1.** *йыйн.* Малдың йөрәк һәм бауыр ите. *Йөрәк-бауыр бешереү.*

**2.** *күсм.* Кешенең эске донъяһы; күңел, йән, рух. *Һөйгән генә йәрең ҡуштан булһа, инеп бара йөрәк-бауырға* (Халыҡ йырынан).

**ЙӨРӘКЛЕ** *с.* Ҡурҡыуҙы белмәгән; ҡыйыу, ғәйрәтле. *Йөрәкле ирҙәр. Йөрәкле кеше. Йөрәкле булыу.*

**ЙӨРӘКЛӘНЕҮ** *ҡ.* **1.** Ҡыйыулыҡ алыу, батыр-

ланыу. *Бәрей күскәндә, йөрәкләнеп, куркмай айғырын тотоп алһаң, бөтә малы һиңә килә, ти* (Әкиәттән).

**2.** *диал.* Йөрәкһеү. *Ғәҙәттә әҙ һөйләй, күп вакыт тыңлап ултыра торған Байғужабыҙ бөгөн йөрәкләнгән, ярһыған.* Д. Юлтый.

**ЙӨРӘК-ТАМЫР: йөрәк-тамыр ауырыуы** йөрәктәге һәм кан тамырҙарындағы ауырыу. **Йөрәк-тамыр системаһы** бөтә кан йөрөшөн тәьмин иткән система.

**ЙӨРӘКҺЕҘ** *с.* Куркак. *Йөрәкһеҙ кеше. Йөрәкһеҙ булыу.*

**ЙӨРӘКҺЕНЕҮ** *к. кайт. кар.* **йөрәкһеү.** *Буранбайҙың йырын тыңлағанда йөрәкһенә ауыл ирҙәре* (Халык йырынан).

**ЙӨРӘКҺЕТЕҮ** *к.* **1.** Хискә тулыштырыу, ярһытыу; ашкындырыу. *Моңло, сихри ауаздар әллә нисек йөрәкһетеп, һағышландырып ебәрҙе.* С. Әлибаев.

**2.** *эйһ. ф. кар.* **йөрәкһеү.** *Йөрәкһетеп китте. Йөрәкһетеп тора.*

**ЙӨРӘКҺЕҮ** *к.* Хискә тулышып ярһыу; ашкыныу. *Дәртле көйгә төшөп бейергә тип, йәш кайындар тора йөрәкһеп.* Р. Бикбаев. *Ашауҙан калып буҙ толпар йөрәкһеп тора, балакай* (Кобайырҙан).

**ЙӨРӘНӘ** *и.* Бешкән бауырҙы һөҙләккә һалып, оса майына кушып әҙерләгән аш.

**ЙҮҒЕРГЕЛӘҮ** *к.* Бер тегеләй, бер былай йүгереү, ары-бире йүгереү. *Мин халык төркөмө янына барҙым. Әсәйем шунда йүгергеләп йөрөй, ул якын бара башлаһа, һалдаттар уны ситкә төртөп ебәрә.* Ш. Насыров.

**ЙҮГЕРЕК** *с.* **1.** Йүгереүгә, сабыуға шәп. *Йүгерек юрғалар. // Ал бирмәгән йүгерек. Йүгеректәр ярышы.* ■ *Утыҙлап йүгерек ат оҙонға сабырға китте.* Д. Юлтый. *Ул [тай] быны тигән йүгерек булды.* С. Агиш.

**2.** *күсм.* Етеҙ, йылдам, шәп хәрәкәтле. *Йүгерек һыу.* ■ *Аткыстан йүгерек ук булмаҫ* (Кобайырҙан). / Етеҙ, өлгөр хәрәкәтле. *Йүгерек куллы.* ■ *[Зәкиә] йүгерек кара күҙҙәре менән беҙҙе, кулыбыҙҙағы сумаҙандарҙы карай һалып алды.* Ғ. Ғүмәр.

● *Йүгерек тә йүгерек — уй йүгерек.* Әйтем.

**ЙҮГЕРЕКЛӘТЕҮ** *к. йөкм. кар.* **йүгерекләү.**

**ЙҮГЕРЕКЛӘҮ** *к.* Йәһәтләп, тегеләй-былай йүгереү. *Ул [Айбулат] әсәһе үлгәс, ерләргә тип йүгерекләп йөрөгәндә, Ныязгол үҙе сакырып алып, биш һум акса бирҙе.* Һ. Дәүләтшина.

**ЙҮГЕРЕКЛӘШЕҮ** *к. урт. кар.* **йүгерекләү.** *Йүгерекләшеп йөрөү.*

**ЙҮГЕРЕҮ** *к.* **1.** Аяктарҙы тиҙ-тиҙ алға ташлап, кыҙыу хәрәкәт итеү. *Йән-фарман йүгереү. Тороп йүгереү. Шәп йүгереү. Йүгереп барыу. Йүгереп етеү. Йүгерә-йүгерә хәлдән тайыу.* ■ *[Гөльямал:] Хисмәтулла кайтканын ишеткәс, аягым ергә теймәй йүгерҙем.* Я. Хамматов. *Ялан ғына ерҙә ай кылғанлык, буҙәнәләр йүгерә төбөндә* (Халык йырынан). / *һөйл.* Ашығыс, етеҙ атлау; кабаланыу. *Йомошка йүгереү. Сығып йүгереү.* ■ *Кыҙ йүгереп сығып, әфисәрҙән бер алма һатып алған* (Әкиәттән). *Йүгерә-йүгерә еләк йыям йәшел тәрилкәләргә* (Халык йырынан).

**2.** Билдәле бер йүнәлештә етеҙ хәрәкәт итеү. *Манжур сукыларын әйләнгеләп, тағы йүгерҙеләр вагондар.* Р. Ниғмәти. / Бик етеҙ хәрәкәт итеү (кулдарға, күҙгә карата). *Йәш катындың буй-һынына күҙҙәрем йүгерә торҙо.* Ғ. Ғүмәр.

**3.** *һөйл.* Ниндәйҙер бер эште хәстәрләп, кабаланып йөрөү. *Көнө-төнө эш тип йүгереп, күҙ асырға ла вакыт юк.*

**4.** Тәнгә таралыу, тәьҫир итеү. *Биткә кан йүгереү. Эскә йылы йүгерҙе.* ■ *Кымыҙ акрынлап кына эсте йылытып, бөтә тамырҙарға йүгерә.* Ғ. Дәүләтшин.

**5.** *күсм.* Нимәлер барлыкка килеү, күренеү; ниндәйҙер төҫкә инеү. *Йөҙгә кыҙыллык йүгереү. Сәскә сал йүгереү.*

● *Йүгереп куян кыуалар, ултырып акыл йыялар.* Әйтем.

**ЙҮГЕРЕШ** *и.* Йүгерешеү ярышы. *Батша кыҙын алам тигән кеше йүгерештә берәүгә лә ал бирмәгән бер йүгерек әбей менән ярышырға тейеш, ти* (Әкиәттән).

◆ **Куш йүгереш** йәштәр уйыны (кушлап етәкләшеп, бер-бер артлы баҫалар; быларға арты менән боролоп, иң алда берәү тора; уны «әтәс» тиҙәр; алдағы пар капыл ике якка айырылып каса; «әтәс» шуларҙың береһен баҫтырып тота ла артка барып баҫа; тотолмай калғаны «әтәс» була).

**ЙҮГЕРЕШЕҮ** *к.* **1.** *урт. кар.* **йүгереү** 1, 2. *Йүгерешеп йөрөү. Йүгерешеп кайтыу. Йүгерешеп сығыу.* ■ *Колхозсылар кемуҙарҙан йүгерешеп, ауылға кайтып бөттө.* Б. Бикбай. *Бала-саға йүгерешә яр буйлап, пароходка кыскыралар кул болғап.* Р. Янбулатова.

**2.** Йүгереп ярышыу. *Йүгерешеп уйнау.* ■ *[Кул әйәһе:] Кулде уратып йүгерешәйек. Мине уҙһаң, ат һинеке булыр* (Әкиәттән).

**ЙҮГЕРЕШСЕ** *и.* Йүгереп ярышыусы.— *Мин Һыңараяк булам. Беренсе йүгерешсемен. Йүгерешергә иш таба алмай каңғырып йөрөйөм* (Әкиәттән).

**ЙҮГЕРЕШТЕРЕҮ** *к. йөкм. кар.* **йүгерешеү** 2. *Балаларҙы йүгерештереү.*

**ЙҮГЕРМӘЛӘҮ** *к. диал.* Йүгерекләү.

**ЙҮГЕРТЕЛЕҮ** *к. төш. кар.* **йүгертеү** [2]. *Алтын йүгертелгән калак.*

**ЙҮГЕРТЕҮ** [1] *к. йөкм. кар.* **йүгереү** 1—4. *Берәмләп йүгертеү. Кумәкләп йүгертеү. Йомошка йүгертеү. Йүгертеп алып килеү. Кан йүгертеү.* ■ *Мәғфүрә Диләне һыу буйына Асатайҙы кайтарырға йүгертте.* Һ. Дәүләтшина. *Сәгиҙә көлтәләрҙе йүгертеп йөрөп ҙуратка һала ине.* М. Тажи. *Сурагол .. асыуын йөҙөнә йүгертеп, ниҙер әйтергә уктадды.* Т. Хәйбуллин. *Рауил бармактарын йүгертеп, «Аккоштар» көйөн һыҙҙыра.* «Совет Башкортостаны», 1978, 13 ноябрь.

● *Атты камсы йүгертә, егетте намыҫ йүгертә.* Әйтем.

**ЙҮГЕРТЕҮ** [2] *к.* Берәй иәмәнең өҫтөн йока ғына итеп икенсе берәй матдә менән каплатыу; ялатыу, буяу. *Балдакка алтын йүгертеү. Көмөш йүгертеү.* ■ *Һәжәр сәстәрен төҙәтте, битенә кершән якты, ирендәренә кыҙыл йүгертте.* Ғ. Хәйри.

**ЙҮГЕРӘ-АТЛАЙ** *р.* Бер йүгереп, бер атлап; бик ашығып; йүгерә-атлап. *Йүгерә-атлай йөрөү.* ■ *Мәрфуға апай йүгерә-атлай беҙҙең ҡапҡанан инеп китте.* С. Агиш.

**ЙҮГЕРӘ-АТЛАП** *р. ҡар.* **йүгерә-атлай.**

**ЙҮГЕРӘ-САБА** *р.* Бер йүгереп, бер сабып; бик ашығып. *Эт .. йүгерә-саба ауыл ягына китте.* С. Кулибай.

**ЙҮГӘН** *и.* Менге һәм екке малдың башын тотор өсөн ауыҙлыҡлы итеп бауҙан эшләнгән нәмә. *Еҙле йүгән. Ҡайыш йүгән. Йүгән башы. Йүгән теҙгене. Йүгән төйөү. Атҡа йүгән кейҙереү. Аттың йүгәнен һыпырыу.* ■ *Йүгән генә тотоп төшөп киттем тугайҙагы торған тура атҡа* (Халыҡ йырынан).

**ЙҮГӘНЛЕ** *с.* Йүгән кейҙерелгән. *Йүгәнле ат. Йүгәнле булыу.*

**ЙҮГӘНЛӘНЕҮ** *ҡ. төш. ҡар.* **йүгәнләү.** *Йүгәнләнгән ат.*

**ЙҮГӘНЛӘТЕҮ** *ҡ. йөкм. ҡар.* **йүгәнләү.** *Атты йүгәнләтеү.*

**ЙҮГӘНЛӘҮ** *ҡ.* **1.** Йүгән кейҙереү. *Таҙ килеп, бейәне йүгәнләне лә теҙгенде ағасҡа бәйләне* (Әкиәттән).

**2.** *күсм.* Сик ҡуйып, тыйыу. *Нәпсене йүгәнләү.* ■ *Йөрәгемде ниңә йүгәнләнем торған саҡта һиңә талпынып?* Р. Бикбаев.

**ЙҮГӘНҺЕҘ** *с.* **1.** Йүгән кейҙерелмәгән. *Йүгәнһеҙ ат. Йүгәнһеҙ булыу.*

**2.** *күсм.* Тәртибе булмаған, әҙәпһеҙ, тыйнаҡһыҙ. *Бындай ярлы өйҙәрҙә һуҙҙәр иркен, йүгәнһеҙ була.* Д. Юлтый.

**ЙҮГӘНҺЕҘЛӘНЕҮ** *ҡ.* Йүгәнһеҙгә әйләнеү, тыйнаҡһыҙланыу.

**ЙҮКШӘ** *и. һөйл.* Ҡарабойҙай. *Сыйырсыҡ сыбар килһә, йүкшә уңа.* Һынамыш.

**ЙҮКӘ** *и.* **1.** Киртләс япраҡлы, хуш еҫле, баллы, ваҡ һарғылт сәскәле ағас. *Йүкә ағасы. Йүкә сәскәһе. Йүкә балы.* ■ *Өс-дүрт йүкә ағасы бер гектар ҡарабойҙай биргән балды бирә.* М. Хисмәтов.

**2.** Шул ағастың ҡабығы, ҡайыры. *Йүкә һуйыу. Йүкә батырыу. // Йүкә бишек.* ■ *Мәктәптә уҡыуҙар туҡтауға йүкә төшә башланы.* З. Ғәлимов.

**3.** Шул ағастың ҡабығынан, ҡайырынан һыҙырып алынған эске ҡатлауы. *Йомшаҡ йүкә. Ҡаты йүкә. // Йүкә дилбегә. Йүкә йыуғыс. Йүкә йүгән. Йүкә сыбыртҡы.* ■ *Бабай һалабаш батырған, йүкә ишкән, септә һуҡҡан, әбей йөн теткән, еп иләгән* (Әкиәттән). **Бешкән йүкә** йүкә ҡупмағанда ҡырҡҡан йүкә ағастарын ҡышын урманда ылашҡа һалып, аҫтына тигеҙләп ут яғып, ҡубыуы еткәс, ағасынан һуйып, һыҙырғыс аша ҡайырынан айырып алынған аҡ йүкә. **Сей йүкә** ағастан сейләй һуйып, һыҙырғыс аша ҡайырынан айырып алынған һарғылт йүкә (арҡан, дилбегә ишеүгә, сабата үреүгә тотонола). **Һалабаш йүкәһе** күлгә батырылған йүкә ҡабығы сереп, һалабашы өлгөргәс, ҡайырынан һыҙырып алынған мурт йомшаҡ йүкә (ғәзәттә, йыуғысҡа, септә һуғыуға, нуҡта, нәҙек бау ишеүгә тотонола).

◆ **Йүкә сөй** нимәгәлер ыңғайлатыр, ниҙер эшләтер өсөн юрамал әйтелгән маҡтау һүҙе. *Йүкә сөйгә иреү. Уга йүкә сөй килешә.* **Йүкә шына (йәки сөй) ҡағыу** нимәгәлер ыңғайлатыр, ниҙер эшләтер өсөн юрамал маҡтау, юхалау. *Йүкә шына ҡаҡҡандарын белеп торам инде, ну рәхәт. Маҡтау кемдәрҙең генә башын әйләндермәгән тиһең.* Р. Низамов. **Таштан йүкә һуйыу [менән бер]** бик ауыр эшкә ҡарата әйтелә. *[Көнһылыу:] Ҡуй инде, был алабута тартыу тигәндәре таштан йүкә һуйыу менән бер.* Ғ. Ғүмәр.

**ЙҮКӘЛЕК** *и.* Йүкә үҫкән ағаслыҡ, йүкә урманы.

**ЙҮКӘЛӘҮ** *ҡ. диал.* Йөпләү.

**ЙҮЛӘР** *с.* Аҡылға кәм; ахмаҡ, алйот. *Йүләр баш. Башты йүләргә һалыу.* / Шелтәләп әрләгәндә ҡулланыла. *[Һалдат:] Йүләр, ранен булғанһың, мылтыҡ күтәреп бараһың.* Д. Юлтый.

● *Белмәгән йүләр белгәндән көләр.* Әйтем. *Йүләр йүләрҙе маҡтар.* Әйтем.

**ЙҮЛӘРЛЕК** *и.* **1.** Йүләр булыу сифаты, хәле. *Йәшлек өсөн килешкән ғәҙәттәр ҡартлыҡ өсөн һис бер ярамай. Ҡай берәүҙәр йәшлек йүләрлеген үлгәнсә һөйләргә самалай.* С. Ҡудаш.

**2.** Уйлап, аҡыл менән эшләнмәгән эш. *Йүләрлек эшләү.* ■ *Уларҙан курҡ[майым]. .. Ләкин был хаҡта өҫтән генә уйлау йүләрлек булыр ине.* Т. Хәйбуллин. *Сафлыҡ, тоғролоҡ һыҙығы эсендә булмаған мөхәббәт — йүләрлек, насарлыҡ булалыр.* М. Ғафури.

**ЙҮЛӘРЛӘНЕҮ** *ҡ.* Йүләрлек эшләү, йүләрлек күрһәтеү; ахмаҡланыу, алйотланыу.

**ЙҮН** *и.* **1.** Кешенең физик көсө, рухи хәленән килгән сифаты, эш башҡарыу мөмкинлеге. *Батырмын тип кем әйтмәй — яу килгәндә йүне юҡ.* Салауат Юлаев.

**2.** Тейешле тәртип. *Эште йүнгә һалыу.* ■ *[Йомағужа:] Ата улды, инә ҡыҙҙы белмәй тигәндәй, бер ҙә йүн ҡалманы бит әле.* Ә. Вәли.

**3.** *с. мәғ.* Тейешле тәртипкә, кәрәкле сифатҡа ярашлы булған; арыу, яҡшы. *[Мәзин:] Ни, кем, Закир ҡустым ниндәй байҙа кем булып эшләй икән, тием. Былай төҫ-башы ла йүн генә, кеҫә ягы ла ҡалын ғына булғас, берәй арыу байҙалыр, тием.* З. Биишева. // *[Ҡарасәс:] Йүн әйтәһең: ырыҫ-дәүләт менән мөгөҙ сыҡмай.* Х. Ғәбитов.

**4.** Уңышлы, ыңғай эш; файҙа. ■ *Хәҙер ауылға таралыуҙан йүн сыҡмаҫ.* Б. Хәсән.

**5.** Эш итерлек әмәл, сара, мөмкинлек. *Йүне сығыу. Йүнен табыу.* ■ *Бөгөн кәрәкле әҙерлек яһап, йүнен күреп ҡуйырға кәрәк.* Ғ. Дәүләтшин. *[Үмәр:] Берәй төрлө һурпа бешерерлек йүнең булманымы ни һуң? Туҡмас кәрәк ине.* Һ. Дәүләтшина.

● *Йән биргәнгә йүн биргән.* Мәҡәл.

**ЙҮНКЕТЕҮ** *ҡ.* Интектереү, йонсотоу. *[Тормош] һорай минән яҡты хыялымды, хыялдан да, ахыры, йүн көтә. Бар хәлемсә бирәм — әйләнә лә юҡ нәмәне һорап йүнкетә!* М. Илбаев. *Кире азамат йорт көтһә, йортон-илен йүнкетер* (Ҡобайырҙан).

**ЙҮНКЕҮ** [1] *ҡ.* Интегеү, йонсоу. *Ҡарт соҡор эсендә ете йыл буйы ултыра-ултыра бик йүнкеп китә* (Әкиәттән).

**ЙҮНКЕҮ** [2] *ҡ. диал.* Йүнәлеү, мандыу. *Бер ҙә йүнкеп булмай.*

**ЙҮНКЕҮ**[3] *с.* Ауыр эш-хәлдән ҡаҡшаған; йонсоу. *Йүнкеү кеше.*

**ЙҮНЛЕ** *с.* **1.** Ыңғай баһа бирерлек, һәйбәт, яҡшы (кешегә ҡарата). *Йүнле әҙәмгә осрау. Йүнле булыу. // Үҙеңде кеше араһында йүнле тотоу.* ■ *[Әбей:] Бер йүнле егет булһаң ҡыҙың да ташлап китмәҫ ине.* «Ҡуҙыйкүрпәс». *[Әбей:] Берүк йүнле генә йөрө, әҙәпте бел, күп һөйләнмә.* Р. Низамов.

**2.** Сифаты һәйбәт, арыу, яҡшы. *Йүнле аш.* ■ *Ерҙе ашламаһаң, йүнле уңыш алып булмай.* / Ыңғай йөкмәткеле, күңелгә ятышлы; яҡшы. *Йүнле хәбәр.* ■ *Шәхми карт .. хеҙмәтсе кешегә йүнле һүҙ кушмай торғайны.* Т. Йәнәби.

**3.** Иҫәпкә алырлыҡ, рәтле, арыу. *Йүнле эш.* ■ *[Новиков:] Беҙ окопта айҙар буйы йүнле йоҡо күрмәнек.* Д. Юлтый.

● *Айғыр ҡалдырһаң, йүнлеһен ҡалдыр.* Мәҡәл.

**ЙҮНЛЕ-БАШЛЫ** *с.* Иҫәпкә алырлыҡ, иғтибар итерлек яҡшы, рәтле. *Йүнле-башлы эш күрһәткәне юҡ.* ■ *Фабрика ҙур булһа ла, йүнле-башлы техника ла юҡ.* Ғ. Әмири.

**ЙҮНЛӘП** *р.* Үҙ рәүеше һәм кимәленсә; тейешенсә. *Колхоз ойошкандан бирле [Фәхриҙең] йүнләп эшләгәне юҡ.* Б. Бикбай.

**ЙҮНЛӘҮ** *к.* **1.** Эшкә яраҡлы итеү, эшкә индереү; йүнәтеү. *Рәхимә .. алама ҡата, иҫке күлдәк кеүек нәмәләрҙе Мәғфүрәгә бирә лә: «Мә, ал, килен, өҫ-башыңды бөтәйт, бала-сағаңа йүнләп тегеп кейҙер»,*— ти. Һ. Дәүләтшина.

**2.** Ниҙер булдырыу, хәл итеү йүнәлешендә эшләү; хәстәрләү. *Аҡса йүнләү. Аш йүнләү. Юл сығырға машинаны йүнләп ҡуйыу.* ■ *Бына сәсеү эштәрен ҡалайтып йүнләргә.* Ғ. Дәүләтшин.

● *Тапҡандан йүнләгән артыҡ.* Мәҡәл.

**ЙҮНСЕЛ** *с.* Табыу, хәстәрләү яғына булдыҡлы; тырыш. *Йүнсел булыу.* ■ *Ул [Ноғман] .. күп мал таба, тырыш, йүнсел кеше.* Ш. Насыров.

**ЙҮНСЕЛЛЕК** *и.* Ниҙер булдырыу, хәл итеү йүнәлешендә зирәк, оҫҡор булыу сифаты. *Йүнселлек күрһәтеү.*

**ЙҮНТЕРӘҮ** *к.* Ҡартайып көс-хәлдән яҙыу; бәлтерәү. *Егет атынан төшөп өйгә инһә, унда йүнтерәп бөткән бер әбей йөн тетеп ултыра, ти* (Әкиәттән).

**ЙҮНҺЕҘ** *с.* **1.** Эшкә булдыҡһыҙ, насар. *Йүнһеҙ кеше. Йүнһеҙ булыу.* / Шелтәләп, әрләгәндә әйтелә. ■ *— Кит, йүнһеҙ, фартты ебәрҙең! — ти бабайым.* Н. Мусин.

**2.** Килешмәгән, мәғәнәһеҙ, насар. *Йүнһеҙ һүҙ һөйләү. // Йүнһеҙ ҡыланыу.* ■ *Борсолоп ҡайтҡтым яландан бер йүнһеҙ хәлде күреп: кемдер юл буйы ҡалдырған алтын башаҡтар түгеп.* Б. Бикбай.

● *Йүнһеҙ итеген майлар, итеге итәген майлар.* Әйтем. *Йүнһеҙ менән ағас ҡырҡһаң, өҫтөңә йығыр.* Әйтем.

**ЙҮНҺЕҘЛЕК** *и.* **1.** Эшкә булдыҡһыҙ булыу сифаты. *Йүнһеҙлек күрһәтеү.*

**2.** Килешмәгән, мәғәнәһеҙ, насар эш, ҡылыҡ һ. б. *Йүнһеҙлек эшләү.*

**ЙҮНҺЕҘЛӘНЕҮ** *к.* *һөйл.* **1.** Ҡартайып йәки ауырып көс китеү, йүн бөтөү. *Ҡартайҙым, йүнһеҙләндем.*

**2.** Йүнһеҙлек (2 мәғ.) күрһәтеү, йүнһеҙ (2 мәғ.) ҡыланыу.

**ЙҮНӘЙЕҮ** *к.* *диал.* *ҡар.* **йүнәлеү**[2] 2.

**ЙҮНӘЛДЕРЕЛЕҮ** *к.* *төш.* *ҡар.* **йүнәлдереү.** *Бөтә көс йөкләмәне уңышлы үтәүгә йүнәлдерелде.*

**ЙҮНӘЛДЕРЕҮ** *к.* **1.** Берәй тарафҡа йүнәлеш алдырыу; йүнәлтеү. *Машинаны ауылға йүнәлдереү. Кәмәне ярға йүнәлдереү.* / Берәй тарафҡа йәки берәй нәмәгә төбәү. *Ҡараштү йүнәлдереү. Шәм яҡтыһын экранға йүнәлдереү.*

**2.** *күсм.* Ниндәйҙер эш йәки мәсьәләгә төбәү, йүнәлтеү. *Бөтә көстө сәсеү эшенә йүнәлдереү.*

**ЙҮНӘЛЕҮ**[1] *к.* **1.** Берәй тарафҡа юл алыу. *Ауыл яғына йүнәлеү. Ҡайтырға йүнәлеү.* ■ *Балыҡсылар ашығып диңгеҙ ярына йүнәлде.* З. Биишева. / Китергә юл алыу, юлға сығыу. *[Баҡый:] Сәй эсеп, бер-ике сәғәт йоҡларбыҙ ҙа йүнәлербеҙ.* Һ. Дәүләтшина. / Берәй тарафҡа йәки нәмәгә төбәлеү (күҙгә ҡарата). *Уның [Бәкерҙең] күҙҙәре бер нөктәгә йүнәлгән.* Х. Зарипов.

**2.** *күсм.* Ниндәйҙер эш йәки мәсьәләгә төбәлеү. *Илдең бөтә ихтыяры тыныслыҡ һаҡлау эшенә йүнәлгән.*

**ЙҮНӘЛЕҮ**[2] *к.* **1.** Тейешле хәлгә, йүнгә килеү. *Эш йүнәлде.* ■ *Үткән ҡыш ҡар ҡалын булып, йылҡы .. йөҙәү булды. Әле һаман йүнәлеп бөтә алмайҙар.* Ғ. Дәүләтшин.

**2.** Ауырыуҙан һ. б. төҙәлеү; һауығыу, сәләмәтләнеү. *Аяғы йүнәлгән. Яраһы йүнәлгән.* ■ *Утыҙ бер йыл ауырыған бер ҡатын ҡымыҙҙан йүнәлде.* М. Ғөбәйҙуллин.

**ЙҮНӘЛЕШ** *и.* **1.** Тараф. *Вертикаль йүнәлеш.* ■ *Алда ике ҡараҫҡы күренде. .. Өммәт уларҙың ниндәй йүнәлештә барғанын да аңламаны.* Д. Юлтый. *Ғәскәрҙәр .. бирелгән төп йүнәлештә ҙур уңыштарға өлгәште.* Ә. Ихсан.

**2.** *күсм.* Берәй эш, хәрәкәт, күренеш һ. б.-ның үҫеш юлы. *Ғилми эшмәкәрлек йүнәлеше. Политика йүнәлеше.* ■ *Социалистик демократияны артабан үҫтереү — .. совет йәмғиәтенең политик системаһын үҫтереүҙең төп йүнәлеше булып тора.* Башҡорт АССР-ының Конституцияһы, 1984.

**3.** Үҙенә бер төрлө теоретик йәки идеологик нигеҙҙе булған ғилми, ижтимағи ағым. *Сәнғәттә реалистик йүнәлеш. Әҙәби йүнәлештәр.* ■ *1895 йылда Өфөлә марксистик йүнәлештәге тәүге түңәрәк ойошторола.* «Совет Башҡортостаны», 1965, 22 апрель.

◆ **Ҡылым йүнәлештәре** эш-хәрәкәттең субъектҡа йәки объектҡа булған мөнәсәбәттәрен белдергән ҡылым категорияһы.

**ЙҮНӘЛЕШЛЕ** *с.* Билдәле бер маҡсаты булған. *Йүнәлешле тәрбиә. Йүнәлешле эш.*

**ЙҮНӘЛТЕЛЕҮ** *к.* *төш.* *ҡар.* **йүнәлтеү**[1]. *Маҡсатҡа йүнәлтелгән эш.*

**ЙҮНӘЛТЕҮ**[1] *к.* **1.** Берәй тарафҡа йүнәлеш алдырыу; йүнәлдереү. *Машинаны ауылға йүнәлтеү. Кәмәне ярға йүнәлтеү.* ■ *Бәҙерғол шунда ярҙамға резервтағы йөҙ һыбайлыһын йүнәлтте.* Ғ. Хөсәйенов. / Берәй тарафҡа йәки берәй нәмәгә төбәү. *Ҡараштү йүнәлтеү.* ■ *Бары ла йүнәлткән сәмаға баштарын.* Ш. Бабич.

**2.** Ниндәйҙер эш йәки мәсьәләгә төбәү; йүнәлдереү. *Каникулда балалар көсөн файҙалы эшкә йүнәлтергә кәрәк.*

**ЙҮНӘЛТЕҮ** [2] *к. диал. кар.* **йүнәтеү** 1.

**ЙҮНӘТЕЛЕҮ** *к. төш. кар.* **йүнәтеү** 1, 2. *[Крәҫтиәндәрҙең] камыт, ҫбруйҙары, һәнәк, тырмалары йүнәтелгән.* Ғ. Дәүләтшин.

**ЙҮНӘТЕНЕҮ** *к.* Өҫ-башыңды, урын-ереңде ҡарау, йүнәтеү. *Көнтуған йоҡларға йүнәтенә башланы, ти* (Әкиәттән).

**ЙҮНӘТЕП** *р. кар.* **йүнләп.** *Күҙемде йәш каплаған, йүнәтеп күрә лә алмайым.* Ф. Исәнғолов.

**ЙҮНӘТЕҮ** *к.* **1.** Боҙолған, туҙған нәмәне эшкә яраҡлы итеү; төҙәтеү. *Машинаны йүнәтеү. Ҡапҡаны йүнәтеү. Ҡойманы йүнәтеү. Һарайҙы йүнәтеү. Ыңғырсаҡты йүнәтеү. Юлды йүнәтеү.* ■ *Әхмәҙулла бабай ҡаҡшаған ишекте сыңғаһынан һурып алды ла йүнәтергә тотонды.* Ә. Вахитов. / Тәртипкә, йүнгә килтереү, һәйбәтләү. *Сәсте йүнәтеү. Яулыҡты йүнәтеп бәйләү.* ■ *Ҡағыҙ алып, йүнәтеп тағы бер хат яҙҙым.* М. Ғафури.

**2.** Алып, хәстәрләп, бар итеү. *Өҫ-баш йүнәтеү. Бесән йүнәтеү. Утын йүнәтеү.* ■ *[Тәнзилә әбей:] Үҙебеҙгә өй йүнәтеп, бер-ике баш һауын кәзә аҫрай башлағанда, тағы ярман һуғышы сығып китте.* М. Тажи. *Бабай, тамаҡҡа йүнәтә торайым әле тип, самауыр ҡуя* (Әкиәттән).

**3.** *диал.* Йыйыштырыу. *Өйҙәре бола, йүнәтмәгәндәр.*

**ЙҮНӘТЕШЕҮ** *к. урт. кар.* **йүнәтеү** 1, 2. *Халыҡ .. отряды гәжәп йылы ҡаршылай. .. Кәрәк икән, һалдаттар менән бергә юл йүнәтешә, күпер һалыша.* З. Биишева.

**ЙҮНӘТЕШТЕРЕҮ** *к.* Арлы-бирле генә төҙәтеү, еңелсә генә йүнәтеү. *Олатаһы, эштән ҡайтҡас, тамаҡ ялғап алды ла йүгән-ҡамыт йүнәтештерергә ултырҙы.* «Совет Башҡортостаны», 1980, 17 август.

**ЙҮНӘТТЕРЕҮ** *к. йөкм. кар.* **йүнәтеү** 1, 2. *Өйҙө йүнәттереү. Итекте йүнәттереү.*

**ЙҮПӘЛӘҮ** *к.* Йомшаҡ һүҙ әйтеп иркәләү; алдаштырыу. *Йүпәләп, эс-бауырға инеү.* ■ *Мортаза Буранды алып ҡайтып бағанаға бәйләне лә йүпәләй-йүпәләй муйынынан ҡойроғона тиклем һыйпап сыҡты.* С. Агиш.

**ЙҮПӘТЛӘҮ** *к. һөйл.* Йомшаҡ һүҙ менән йыуыу; юхалау. *Шүлгән һарайға ингәс, батша урын күрһәткән, бик йүпәтләп, олпатлап, таҡ ягына ултырткан.* «Урал батыр».

**ЙҮРГӘК** *и.* Йәш баланы урай торған сепрәк. *Йүргәген алмаштырыу. Йүргәк йыуыу.* ■ *Ҡойондороп, имеҙеп, ап-аҡ йүргәккә төрөп һалғас, бала яңынан күҙен йомдо.* Ф. Рәхимғолова.

**ЙҮРГӘКЛӘҮ** *к.* Йүргәккә ураү. *Баланы йүргәкләү.*

**ЙҮРЕМ** *и. диал.* Йүрмә.

**ЙҮРЕҮ** *к. диал.* Йүрмәү.

**ЙҮРМӘ** *и.* Һарыҡтың эс майын оҙон-оҙон итеп ҡырҡып, ас эсәккә ҡуша үреп бешергән ашамлыҡ. *Йүрмә бешереү. Йүрмә үреү.*

● *Йөрөгән аяҡҡа йүрмә эләгә.* Мәҡәл. *Юлаусының йомошо йүрмә ашағас онотола.* Мәҡәл.

**ЙҮРМӘЛЕҮ** *к. төш. кар.* **йүрмәү.** Йүрмәлгән ойоҡ.

**ЙҮРМӘЛӘС** *и. диал.* Үрмәләс.

**ЙҮРМӘЛӘҮ** *к.* Ваҡ-ваҡ ҡына баҫып, етеҙ атлау (күберәк бөжәккә, кешегә ҡарата). *Ағайым мине етәкләп йүгерә-атлай бара, ә мин ләп-ләп йүрмәләп, артынан саҡ эйәрҙем.* К. Кинйәбулатова.

**ЙҮРМӘҮ** *к.* Ямау һалмай, арҡыс-торҡос сәнсеп тегеү. *Ойоҡто йүрмәү. Йүрмәп ямау.* / Тек кәндә нәмәнең йөйөн, үтә сәнсмәй, ситтән уралтыу. *Тире ыҫлангас, йөйҙәрҙе тарамыш менән, тарамыш өҫтөнән ҡыл менән йүрмәп, һаба тегәләр.* М. Ғөбәйҙуллин.

**ЙҮТКЕРЕК** *и. һөйл.* **1.** Йүтәл. *Йүткерек тейеү.*

**2.** *һөйл.* Туберкулёз.

**ЙҮТКЕРЕНЕҮ** *к.* Ара-тирә еңел итеп йүткереү. *Нәфиҡ бай аҙбар артына сығып ураны. Оҙаҡ ҡына кикеренеп, йүткеренеп торҙо.* Р. Низамов.

**ЙҮТКЕРЕҮ** *к.* Үпкәнән үҙ иркеңдән тыш өҙөп-өҙөп көслө тын сығарыу. *Быуылып йүткереү. Сәсәп йүткереү. Ҡаҡҡылдап йүткереү.* ■ *Берәү өҙләкһеҙ йүткерә һәм үҙе тирә-яҡтағыларға ҡарап .. нимәлер һөйләргә маташа. Бер аҙҙан ул йүтәленән ҡотолдо.* С. Агиш.

**ЙҮТКЕРТЕҮ** *к.* **1.** *йөкм. кар.* **йүткереү.** *Тәмәке йүткертә.*

**2.** *эйһ. ф. кар.* **йүткереү.** *Грипп булғанда йүткертә, .. сөскөртә, температура күтәрелә.* В. Ғүмәров.

**ЙҮТӘЛ** *и.* Һыуыҡ тейеп йүткерткән ауырыу. *Йүтәл ауырыуы. Йүтәл тейеү.* **Быума йүтәл** *кар.* **сәсәтмә. Күк** (*йәки* **ҡоро**) **йүтәл** ҡаҡырыҡһыҙ йүтәл.

**ЙҮТӘЛЛӘҮ** *к.* Оҙаҡ итеп, ҡат-ҡат йүткереү. *[Быҙауҙар] икенсе көн йүтәлләйҙәр, рәтләп ашамайҙар.* Б. Бикбай.

**ЙҮШКӘ** [*рус.* вьюшка] *и.* Мейестең мөрйәһен яба торған ябыу. *Йүшкәне ябыу.* ■ *Ғатаулла йүшкәне асты ла юныҫҡыға ут төрттө.* Й. Солтанов.

**ЙҮШЛӘҮ** *к. диал. кар.* йүнләү 2.

**ЙҮШӘ** *и.* Ағас башына боҙланып ҡатҡан ҡар; лүшә. *Ҡайындар ҡышҡы һыуыҡтарҙа ап-аҡ бәҫ, ә буранда ҡалын йүшә менән ҡаплана.* Н. Мусин. *Яуаһың да эй ҡар, яуаһың, бурап-бурап көрттәр өйәһең. Ҡалынайтып һаман йүшәне ағастарҙы ергә эйәһең.* С. Ғәбиҙуллин.

**ЙҮШӘН** [1] *и.* Һаҙамыҡ ерҙә үҫкән йомшаҡ ҡондораҡ.

**ЙҮШӘН** [2] *с. диал.* Юшан.

**ЙҮШӘҮ** *к. кар.* **юшау.**

**ЙЫБАЛЫУ** *к. диал. кар.* **ығышыу** [2]. *Йә, һеҙ күп йыбалып йөрөмәгеҙ, беҙ нәмәләрҙе тейәп бөттөк.* Х. Ғәбитов.

**ЙЫБАНДЫРЫУ** *к. эйһ. ф. кар.* **йыбаныу** [1] 1. *Йөрөп килергә йыбандыра.*

**ЙЫБАНЫЛЫУ** *к. эйһ. ф. кар.* **йыбаныу** [1] 1. *Иртәрәк ҡуҙғалыу ярҙам итте. Саҡ ҡына йыбанылһа, ҡоро ҡул ҡайтылыр ине.* Я. Вәлиев.

**ЙЫБАНЫС** *с. диал.* Ялҡыҡҡыс. *Көтөү эше бик йыбаныс, файҙаһыҙ бер һөнәр ул.* Һ. Дәүләтшина.

**ЙЫБАНЫУ** [1] *к.* **1.** Ниҙер эшләргә, ҡуҙғалырға ялҡауланыу; иренеү. *Торорға йыбаныу. Йыба-*

нып эшләү. *Йыбаныл ултырыу.* ■ *Бесән тейәгән бераү кайтып килә. Уның йыбаныл кына ара-тирә атына өндәшеп алғаны ишетелә.* Ғ. Вәлиев. *Улар төрлөсә уйлап, балык һөҙөргә барырғамы тип тә, яланға сығып әйләнергәме тип тә караны, әммә йыбандылар.* Р. Солтангәрәев.

**2.** *диал.* Мыштырлау, ығышыу.

**3.** *диал.* Ялҡыу. *Һыуһылыу әбей улының былай оҙаҡ ултырыуына йыбаныл бөттө.* Ғ. Дәүләтшин.

● *Йыбанмаған оҫта булыр, оялмаған күрәҙә булыр.* Әйтем.

**ЙЫБАНЫУ** [2] *к. диал.* Йыуаныу.

**ЙЫБАУ** *с. диал.* Ығыш, мыштыр.

**ЙЫБЫР** *с. диал. кар.* **йыбытҡы** 1.

**ЙЫБЫР-ЙЫБЫР** *окш.* Ваҡ-ваҡ ҡына баҫып атлағанды йәки саҡ ҡына ҡыбырлап торған хәрәкәтте белдергән һүҙ. *Йыбыр-йыбыр итеү. Йыбыр-йыбыр килеү.*

**ЙЫБЫРЛАТЫУ** *к.* Йыбыр-йыбыр иттереү, йыбыр-йыбыр килтереү. *Бармаҡты йыбырлатыу.* ■ *Сәфәргәле .. оҙон итеп атлай, ә мин төпөш булғас ни, йыбырлатып ҡына баҫҡан булам.* В. Нафиҡов.

**ЙЫБЫРЛАУ** *к.* Йыбыр-йыбыр итеү, йыбыр-йыбыр килеү. *Арҡала әллә нәмә йыбырлай.* Т. Морат.

**ЙЫБЫРЛАШЫУ** *к. урт. кар.* **йыбырлау.** *Ҡорттар йыбырлашып йөрөй.*

**ЙЫБЫТҠЫ** *с.* **1.** Эшкә йомшаҡ; эшлекһеҙ. *Йыбытҡырак ҡыҙ. Телгә шәп тә, эшкә бик самалы.* Н. Мусин.

**2.** Һыуып тәмһеҙләнгән, тәме киткән (ашҡа ҡарата). *Йыбытҡы аш. Ашы йыбытҡы булған.*

**ЙЫҒАС** *и. диал.* Ағас.

**ЙЫҒЫЛЫУ** *к.* **1.** Торған ерҙән ауыу; ҡолау. *Артҡа йығылыу. Иҫһеҙ булып йығылыу. Хәлһеҙ булып йығылыу. Сәсәп йығылыу. Тайып йығылыу. Һөрлөгөп йығылыу. Эләгеп йығылыу.* / Юғарынан аҫҡа ауыу; ҡолау. *Ағастан йығылыу. Аттан йығылыу. Йығылып ҡалыу.* ■ *[Сәгиҙә:] Ул кош бынау ергә йығылып төштө.* М. Тажи.

**2.** *күсм.* Эш, тормошта бәләгә, ауыр хәлгә ҡалыу. *[Ғафури:] Йығылғанға йоҙроҡ шул булалыр инде. Заһретдин картка бәхетһеҙлек төрлө яклап килә: үҙенә расчёт биргәндәр, улы фронтта үлгән, Рәхимен бүрәнә баҫҡан.* С. Ҡудаш.

**3.** *күсм.* Һәләк булыу, үлеү. *Ярты ғәскәр яуҙа йығылған, кый үләндәй дошман ҡырылған.* М. Кәрим.

**4.** Киҫкен хәрәкәт менән ҡапыл ултырыу, ятыу һ. б. *Ҡосаҡҡа йығылыу. Урынға йығылыу.* ■ *Йәй буйы нисәмә малай тотоп эшләттеләр. Көн юк, төн юк бахырҙарға, арып, арманһыҙ булып йығылалар.* Ғ. Дәүләтшин. *Аяҡ йөрөгәндә, өйгә ҡайтып йығылырға кәрәк.* З. Биишева.

**5.** *күсм.* Ауыр хәлдә ҡалып, сараһыҙ булып кемгәлер һыйыныу. *[Йыһангир:] Гөлнәзирә, балаларым! Һеҙ бит минең берҙән-бергенәләрем! Һеҙҙән башка кайҙа барып йығылайым.* Ш. Бикҡол.

**6.** Хәл ҡылымдың *-п* формаһында ярҙамлыҡ ҡылым менән килеп, нимәгәлер тиҙ генә ынтылыуҙы белдерә. *Йығылып барыу.* ■ *Хәҙер крәҫтиәндәр эре биҙәкле тауарға йығылып ята.* С. Агиш.

**7.** Хәл ҡылымдың *-п* формаһында килеп, эш-хәрәкәттең бөтә күңелдән ихлас эшләнгәнен белдерә. *Йығылып ашау. Йығылып китеп ышаныу.* ■ *Юл оҙоно ул [иптәшем] үҙенең ауылын, тау-йылғаларын йығылып маҡтап барҙы.* Ә. Вахитов.

◆ **Аяҡҡа йығылыу** инәлеп, ялбарып мөрәжәғәт итеү. *Батшаның ҡыҙы: «Атайымды зинһар үлтермә!» — тип Ҡыҙрастың аяғына йығыла* (Әкиәттән). **Аяҡтан йығылыу** 1) арып, яфа сигеп, арманһыҙ булыу. *Атты әҙләп аяҡтан йығылдым;* 2) ауырып, түшәккә ятыу. *Бабай ауырып аяҡтан йығылған* (Әкиәттән). **Түшәккә йығылыу** ныҡ ауырып китеү. *Балаларҙың атаһы түшәккә йығылған* (Әкиәттән).

● *Арғымаҡ йығылһа, алға йығылыр.* Мәҡәл. *Үҙе йығылған иламаҫ.* Әйтем.

**ЙЫҒЫЛЫШЫУ** *к. урт. кар.* **йығылыу** 1—6. *Йығылышып ятыу. Йығылышып бөтөү.*

**ЙЫҒЫТЫУ** *к. диал.* Йығыу, ҡолатыу. *Йығыта төртөү.*

**ЙЫҒЫУ** (йыҡ-) *к.* **1.** Торған ерҙән ауҙарыу; ҡолатыу. *Бағананы йығыу. Артҡа йығыу. Ергә йығыу. Йыға төртөү. Бәреп йығыу. Тартып йығыу. Төкөп йығыу. Этеп йығыу. Йыға һуғыу.* ■ *[Бай:] Сурағол, һин бит ана теге шаҡый күҙ тайҙы боҙға йығып, янбашын һындырҙың.* Т. Хәйбуллин. *[Тимергәле:] Ашығыу — ул шайтан эше. Мин улай һөрлөктөрөп йығайым тигән уй менән килмәнем.* Һ. Дәүләтшина. / Көрәшеп еңеү. *Буранбай Теүәлбайҙы йыға. «Бына был егет таҙа йыҡты»,— тип халыҡ Буранбайҙы ҡотлап ала.* Х. Ғәбитов. / Өҫтөндә тотмай төшөрөү, ауҙарыу (атҡа ҡарата). *Көрән ат өҫтөндә малай тотмай, йыға ла китә.* Д. Юлтый.

**2.** Күпләп ауҙарыу, ҡырҡыу, сабыу (үҫеп ултырған нәмәләрҙе). *Урманды йығыу.* ■ *Сабыусылар йыйылды. .. «Әйҙәгеҙ, уҙамандар, йыға башлайыҡ»,— тине Ҡотләхмәт бабай.* Ф. Исәнғолов.

◆ **Һүҙен (йәки һүҙҙе) йыҡмау** кешенең һүҙен кире ҡаҡмау, риза булыу, һүҙен юҡҡа сығармау.— *Ағайым, беҙҙең алама өйҙө күреп сыҡ тигәс, һүҙен йыҡмай, килдем бына.* Б. Бикбай.

**ЙЫҒЫШЫУ** *к. урт. кар.* **йығыу.** *Ағас йығышыу. Ҡойманы йығышыу.*

**ЙЫЗЛАТЫУ** *к. һөйл.* Оҫҡон сәскән кеүек йылтыратып тороу (күҙҙе). *Ут күҙҙәрен йызлатып, ул [бесәй] ҡарап алды һаҡ ҡына.* А. Игебаев.

**ЙЫЗЛАУ** *к. һөйл.* Оҫҡон сәскән кеүек йылтырап тороу (күҙгә ҡарата). *Күҙе йызлап тора.*

**ЙЫЗРАЙТЫУ** *к. кар.* **бәзрәйтеү.**

**ЙЫЗРАЙЫУ** *к. кар.* **бәзрәйеү.** *Йызрайып ҡарап тора.*

**ЙЫЗЫҠАЙ** *и. диал.* Һуҡыр шәм.

**ЙЫЙҒАС** *и. иҫк. кит.* Ағас.

**ЙЫЙҒЫС** *и.* Усмала, ҡырҙа ятҡан бесән, һаламды йыя торған ҡулайлама. *Бесән йыйғыс. Һалам йыйғыс.*

**ЙЫЙҘЫРЫУ** *к. йөкм. кар.* **йыйыу.** *Башаҡ йыйҙырыу. Еләк йыйҙырыу. Халыҡты йыйҙырыу. Кейемде бер урынға йыйҙырып ҡуйыу.*

**ЙЫЙНАҠ** *с.* **1.** Бөтә нәмә урын-еренә ҡуйылған, йыйыштырылған; бөхтә. *Бәләкәй генә йыйнаҡ булмә. Йыйнаҡ итеп йыйыштырыу. // Йыйнаҡ тотоу.*

**2.** Бөтә нәмәһе ҡаралған, тәрбиәле булған. *Өйҙөң һул яғынараҡ ҡаршы һалынған кирбес келәт, уға текәләп, ялғанып ситкән ҡура, бәләкәй генә һарай, ялан кәртәләр — бөтәһе лә бергә бөтөн генә, йыйнаҡ ҡына бер тормошто күрһәтә.* Һ. Дәүләтшина.

**3.** Эшкә, донъя ҡарауға тәрбиәле; бөхтә. *Йыйнаҡ бала. Йыйнаҡ ҡатын. Йыйнаҡ булыу.*

**4.** Кәрәге генә йыйып тупланған; күләме, эстәлеге яғынан ҡыҫҡа, тарау түгел; ыҡсым. *Йыйнаҡ әҫәр.*

**ЙЫЙНАҠЛЫҠ** *и.* **1.** Бөтә нәмә урын-еренә ҡуйылған, йыйыштырылған күренеш; бөхтәлек. *Барлыҡ урында таҙалыҡ, йыйнаҡлыҡ. Был, берҙән, хужа ҡатындың уңғанлығын күрһәтә, икенсе яҡлап, егеттең ыҡсым йәшәргә яратыуы тураһында һөйләй ине.* Б. Бикбай.

**2.** Эшкә, донъя ҡарауға тәрбиәле булыу сифаты; бөхтәлек. *Йыйнаҡлыҡ күрһәтеү.* ■ *Волжскийҙың һөйләшеүе лә, атлап йөрөүе лә бик иплe. Был тыйнаҡлыҡ бәлки уның эске йыйнаҡлығынан, үҙ көсөнә ышаныуҙан киләлер.* И. Абдуллин.

**3.** Кәрәге генә йыйып тупланған, күләме, эстәлеге һ. б. яғынан тарау булмаған хәл; ыҡсымлыҡ. *Билдәле бер күләмдәге әҫәргә яҙыусы йөкмәткене ни дәрәжәлә «тығыҙ» һыйҙыра алған композицияның йыйнаҡлығы бына ошоға бәйләнгән.* К. Әхмәтйәнов. *Халыҡ орнаментының королошонда гәжәп бер йыйнаҡлыҡ һыр-биҙәктәрҙең симметрия (тигеҙлек) ҡанундарына буйһоноп килеүе, пропорцияларҙың .. теүәл булыуы, айырым элементтарҙың үҙ-ара килешеүе менән өлгәшә.* Н. Бикбулатов.

**ЙЫЙНАҠСЫЛ** *с.* Бәрәкәтһеҙләмәй, йыйып тота белгән, һаҡсыл. *Йыйнаҡсыл кеше. Йыйнаҡсыл ҡатын. Йыйнаҡсыл булыу.*

**ЙЫЙНАҠҺЫҘ** *с.* **1.** Бөтә нәмә урын-еренә ҡуйылмаған; йыйыштырылмаған; бола. *Ишбулдының өйө йыйнаҡһыҙ. Һауыт-һабалары, ҡаралдылары төрлөһө төрлө урында туҙышып ята.* Х. Ғәбитов.

**2.** Эшкә, донъя ҡарауға тәрбиәһеҙ. *Йыйнаҡһыҙ кеше. Йыйнаҡһыҙ булыу.*

**ЙЫЙНАЛЫУ** *к.* **1.** *кар.* **йыйылыу** 2. *Йыйналып торған халыҡ.*

**2.** *кар.* **йыйыныу.** *Ҡайтырға йыйналыу.*

**ЙЫЙНАУ** *к. диал.* Йыйыу.

**ЙЫЙНАУЛАУ** *к. кар.* **йыйнаулашыу.**

**ЙЫЙНАУЛАШЫУ** *к.* Күмәкләп бергә тупланыу; йыйнаулау. *Йыйнаулашып эшләү.* ■ *Ҡарт-королар урам мөйөшөндә йыйнаулашып гәйбәт туйлайҙар.* Ғ. Амантай.

**ЙЫЙЫЛМА** *с.* **1.** Төрлө төркөм, команда һ. б. йәки төрлө урындан йыйылған кешеләрҙән торған. *Йыйылма команда.*

**2.** Төрлө төрҙәге нәмәләрҙән, элементтарҙан йыйылған, төҙөлгән. *Йыйылма оркестр.*

**3.** Тейешле белешмәләрҙе бергә туплаған. *Йыйылма таблица.*

**4.** Өлөш-өлөштәрҙән йыйылған. *Йыйылма өй.*

**ЙЫЙЫЛМАЛЫ** *с.* Йыйыла һәм таратыла торған. *Йыйылмалы карауат.*

**ЙЫЙЫЛЫУ** *к.* **1.** *төш. кар.* **йыйыу** 1—4. *Йыйылған аҡса. Һайлап йыйылған ағас.* ■ *Һигеҙ ауылдан ҡунаҡ йыйыла.* Һ. Дәүләтшина.

**2.** Күмәкләп бер ергә килеү; тупланыу. *Бүлмәгә йыйылыу. Уйынға йыйылыу. Ваҡытында йыйылыу. Йыйылып килеү. Йыйылып ултырыу. Йыйылып һөйләшеү. Күмәкләп йыйылыу.* ■ *Мәктәп янына бер көтөү кәҙә йыйылған.* З. Биишева. *Һарай алдындағы майҙанға халыҡ йыйыла* (Әкиәттән). / Күмәкләп берләшеү, йыйнаулашыу. *Ауыл йәштәре йыйылып, аҡса һалышып, миңә ошо скрипканы алып бирҙе.* С. Агиш.

**3.** Бер урынға тупланыу; эркелеү. *Соҡорға йыйылған һыу.* / Береһе өҫтөнә береһе өҫтәлеп артыу, күбәйеү (төрлө уй-хис, тәжрибә кеүеккә ҡарата). *Эскә йыйылған бөтә ауыр төйөндәрҙе сисеп, .. һөйләп бирге килә.* Д. Юлтый.

● *Тамсынан күл йыйыла.* Мәҡәл.

**ЙЫЙЫЛЫШ** *и.* Йәмғиәттең төрлө мәсьәләне бергәләшеп ҡарау өсөн йыйылған күмәк ултырышы. *Дөйөм йыйылыш. Колхоз йыйылышы. Комсомол йыйылышы. Һайлау йыйылышы. Йыйылыш үткәреү. Йыйылыш ҡарары. Йыйылыш председателе. Йыйылышҡа йөрөү. Йыйылышты асыу. Йыйылышта ҡатнашыу. Йыйылышта һөйләү. Йыйылыштың көн тәртибе.*

**ЙЫЙЫЛЫШЫУ** *к. урт. кар.* **йыйылыу** 2. *Бергә йыйылышыу. Йыйылышып һөйләшеү. Йыйылышып ултырыу.*

**ЙЫЙЫМ** *и.* **1.** Берәй кәрәк өсөн халыҡтан йыйылған аҡса. *[Әлмәт:] Беҙ һағын да түләйбеҙ, төрлө йыйымын да бирәбеҙ, әммә тамағыбыҙ туҡ.* Б. Бикбай. *Темәстәге беренсе граждандар мәктәбе .. тәүҙә халыҡ йыйымы иҫәбенә йәшәй.* «Совет Башҡортостаны», 1967, 11 апрель.

**2.** Иген, емеш-еләк, йәшелсә, балдың миҙгелендә йыйылған миҡдары. *Игендең тулайым йыйымы. Балдың йәйге йыйымы.*

**ЙЫЙЫН** [1] *и.* **1.** *тар.* Күмәк ырыуҙың ил, донъя хәлдәрен һөйләшеп, һүҙ, кәңәш беректереү өсөн саҡырған оло йыйылышы (һый, уйын, бәйге менән үткәрелгән). /Йәмғиәттең ниндәйҙер мәсьәләне ҡарау өсөн йыйылған йыйылышы. *Йыйын йыйыу.*

**2.** Яҡын-тирә ауылдарҙы йыйып, һый, уйын, төрлө ярыш менән үткәрә торған йәйге байрам; бәйге. *Ул [Әхмәҙи] йыйындарҙа көрәшеп һебәләр алған.* Ж. Кейекбаев. *Майҙы үткәргәс халыҡтар, эш менән июнь етер. Милли байрамдар килерҙәр, бик хозур йыйын етер.* Ш. Бабич. / *иҫк.* Йәштәр уйыны. *Ауылда аулаҡ өйҙәр, йыйындар була. Шунда уйнап йөрөгән саҡта, күңелең төшөп йөрөгән ҡыҙ йылыраҡ һүҙ әйтһә, .. ҡыуана торғайныҡ.* Т. Йәнәби.

**3.** Саҡырылған ҡунаҡ мәжлесе. *Йәйләүҙә өс көн буйы йыйынға әҙерләнделәр: был йыйын Ныязғолдоң еңеү көнөн билдәләп, дуҫтарҙы шатландырырлыҡ, дошмандарҙың эсен яндырырлыҡ шәп булырға тейеш ине.* Һ. Дәүләтшина.

**4.** *диал. кар.* **туй** 2.

● *Кәңәшле йыйын тарҡалмаҫ.* Әйтем.

**ЙЫЙЫН** [2] *билд. а.* Күп һандағы кешегә йәки нәмәгә ҡарата «теләһә ниндәй, һәр төрлө» тигән

мәғәнәлә, һанға һуҡмай, кәмһетеп әйткәндә ҡулланыла. *Йыйын карт-ҡамҡы. Йыйын сүп-сар. Йыйын юк-бар.* ■ *[Зәйни:] Мин әйтәм, Кинйәбай ағай, хоҙай бәхетте йыйын дуракка бирәлер, ахыры.* С. Мифтахов. *Ҡапҡа төбөн һырып алған йыйын эшлекһеҙ.* Т. Йәнәби.

**ЙЫЙЫНСАҠ** *с.* Эш, тормошта һәр нәмәне матур итеп, еренә еткереп башҡарыусан; йыйнаҡ, бөхтә. *Яҡшы ҡатын шул булыр — яҡшы ҡатын йыйынсаҡ, яман ҡатын шул булыр — яман ҡатын түркенсәк* (Ҡобайырҙан).

**ЙЫЙЫНТЫҠ** *и.* Бер иш нәмәләрҙе тәртипкә килтереп, йыйып баҫтырған китап. *Документтар йыйынтығы. Йырҙар йыйынтығы. Хикәйәләр йыйынтығы. Шиғырҙар йыйынтығы.* ■ *1916 йылда Бабич «Көлкө ҡапсығы» йыйынтығына Фәтих Әмирхандың да хикәйәләрен индергән ине.* С. Ҡудаш.

**ЙЫЙЫНЫУ** *ҡ.* **1.** Кәрәк-яраҡты йыйып, китергә йәки юлға әҙерләнеү. *Рәзилә .. йәһәт кенә йыйынды ла ҡапҡа алдына сыҡты.* Н. Мусин. / Кәрәк-яраҡ нәмәне хәстәрләп, берәй эш, шөғөлгә әҙерләнеү. *Ҡунаҡҡа йыйыныу.* ■ *[Миңһылыу:] Туй-фәлән яһайбыҙ тиһәләр тип, йыйынып йөрөнөм.* Р. Солтангәрәев.

**2.** *-ырға* формаһындағы төп ҡылымдан һуң килеп, берәй эш-хәрәкәтте башҡарыуға ниәт иткәндә белдерә. *Барырға йыйыныу. Китергә йыйыныу. Ҡайтырға йыйыныу. Ятырға йыйыныу. Әйтергә йыйыныу.* ■ *Батша үҙенең берҙән-бер ҡыҙын кейәүгә бирергә йыйына, ти* (Әкиәттән).

**ЙЫЙЫНЫҺЫ** *билд. а.* Бөтә булғаны; бөтәһе, барлығы. *Йыйыныһы ике көнлөк эш. Йыйыныһы биш тонналыҡ йөк.*

**ЙЫЙЫРСА** [1] *и. шул уҡ* **эс ярыһы** (*ҡар.* **яры**).

**ЙЫЙЫРСА** [2]: **мейе йыйырсаһы** мейелә ҙур ярымшарҙың бураҙналар менән бүлгеләнгән өлөшө.

**ЙЫЙЫРСЫҠ** *и.* **1.** Тиреләге, тәндәге юл-юл булып батып үткән эреле-ваҡлы һыҙыҡ; һыр. *Маңлай йыйырсығы.* ■ *Ҡайғырмасы, гәзиз әсәкәйем! Үҙ ғүмереңдә ауыр төндәрҙе күп күрҙең бит һин. Шулар бит һинең сәстәреңә сал йүгертте, йөҙөңә йыйырсыҡ һалды.* К. Кинйәбулатова.

**2.** Ер ҡыртышы ҡатламының тулҡын-тулҡын булып торған бөгөмө. *Тау йыйырсыҡтары.*

**ЙЫЙЫРСЫҠЛАНДЫРЫУ** *ҡ. ҡар.* **йыйырсыҡлау.**

**ЙЫЙЫРСЫҠЛАНЫУ** *ҡ.* **1.** Юл-юл булып батып үткән эреле-ваҡлы һыҙыҡ менән ҡапланыу (тирегә, тәнгә ҡарата); һырланыу. *Әмирхановтың күҙҙәре ағайҙы, морон төптәре йыйырсыҡланып дерелдәне.* С. Агиш.

**2.** Тулҡын-тулҡын булып торған бөгөмдәр менән ҡапланыу (ер ҡыртышына ҡарата).

**ЙЫЙЫРСЫҠЛАУ** *ҡ.* **1.** Юл-юл булып батып үткән эреле-ваҡлы һыҙыҡ менән ҡаплау (тирене, тәнде). *Маңлайҙы йыйырсыҡлау.*

**2.** Тулҡын-тулҡын булып торған бөгөмдәр менән ҡаплау (ер ҡыртышын).

**ЙЫЙЫРСЫҠЛЫ** *с.* **1.** Йыйырсыҡ (1 мәғ.) менән ҡапланған. *Ундағы дозор бер кешене тотоп алып килгән: түңәрәк һаҡаллы, биттәре әҙерәк йыйырсыҡлы.* Б. Хәсән.

**2.** Тулҡын-тулҡын булып торған бөгөмдәр менән ҡапланған (ер ҡыртышына ҡарата). *Йыйырсыҡлы тауҙар.*

**ЙЫЙЫРҺЫУ** *ҡ. диал.* Ерһәү.

**ЙЫЙЫРЫҠ** *и. ҡар.* **йыйырсыҡ** 2. *Тау йыйырыҡтары.*

**ЙЫЙЫРЫЛЫУ** *ҡ.* **1.** Йыйырсыҡ (1 мәғ.) булып йыйылыу. *Маңлайы йыйырылды.*

**2.** Тулҡын-тулҡын булып йыйылыу. *Йыйырылған тау ҡоҡомдары.*

● *Башлыҡ булһаң, башлы бул, йыйырылмаҫ ҡашлы бул.* Мәҡәл.

**ЙЫЙЫРЫУ** *ҡ.* Йыйырсыҡлап йыйыу; сырыштырыу. *Йөҙҙө йыйырыу. Маңлайҙы йыйырыу. Танауҙы йыйырыу.* ■ *Ул [Йәнтимер] ҡаштарын йыйырып, бер аҙ уйлап ала.* С. Агиш.

**ЙЫЙЫУ** *ҡ.* **1.** Тарау, таралып ятҡан нәмәләрҙе туплау, өйөү. *Бер урынға йыйыу. Ҡаламды йыйыу. Йыйып үртәү.* ■ *[Индрил] яныл бөтмәгән торомбаштарҙы өйөп, күмерен бер урынға йыйып, яндырып бөтөрөп ҡуя.* Д. Юлтый. *Гөлйөҙөм .. тауыҡ емлеген усы менән һыпырып йыйып, турпышаға урап, арбаға һалды.* Һ. Дәүләтшина. / Күмәген бергә үҙ янына килтереү. *Дуҫтарҙы йыйыу. Колхоз активын йыйыу. Йыйылыш(ҡа) йыйыу. Йыйын(ға) йыйыу. Майҙан(ға) йыйыу. Мәжлес(кә) йыйыу. Табын(ға) йыйыу. Уйын(ға) йыйыу.* ■ *Хан йәнә вәзирҙәрен йыйып кәңәш итешкән* (Әкиәттән). / Төрлө урында ятҡан нәмәләрҙе бер урынға туплау, һалыу; йыйыштырыу. *Туҡта, нишләп сумаҙаның ҡуйҙың?.. Тиҙерәк йый чертёжың.* Ғ. Сәләм. *Бөтә байлыҡтарын йыйып, алтын һандыҡҡа тейәп, улар юлға сыҡҡан* (Әкиәттән). / Алынған, таратылған нәмәне үҙ урынына ҡуйыу. *Ашъяулыҡты йыйыу. Аш урынын йыйыу.* ■ *Шәхми карт табаҡ-һауыттарҙы йыя һалды.* Т. Йәнәби. / Һәр нәмәне урын-еренә ҡуйып, тәртипкә килтереү; йыйыштырыу. *Өмөтбайҙың бисәһе Ҡарасәс үҙенең өй ҡаралдыһын булғанынса матурлап йыйып ҡуйған.* Ғ. Дәүләтшин. *[Сәрби:] Ҡыҙым, был яҡты аҙыраҡ йыйырға кәрәк.* Х. Ибраһимов. **Урын йыйыу** йоҡлап торған урынды тәрбиәләп ҡуйыу.

**2.** Айырым өлөштәрҙе бер бөтөнгә берләштереү. *Йыйыу цехы.* ■ *Тракторҙарҙы һүтеү һәм йыйыу колхоздан килгән механизаторҙар тарафынан башҡарыла.* «Совет Башҡортостаны», 1968, 18 февраль.

**3.** *типогр.* Хәрефтәрҙе баҫмаға әҙерләп теҙеү. *Китап йыйыу.* ■ *«Мәжлес» тигәнен ҡойроҡһоҙ хәреф менән йыйғандар.* С. Агиш.

**4.** Тарау йәки һибелеп ятҡан нәмәләрҙе берәмләп сүпләү, алыу. *Алма йыйыу. Башаҡ йыйыу. Еләк йыйыу. Емеш йыйыу. Йыуа йыйыу. Сыйыр йыйыу. Сәскә йыйыу.* ■ *Оморҙаҡ төрлө-төрлө аҫыл таштарҙы йыйып, тау аҫтына ташлай* (Әкиәттән). / Үҫтерелгән нәмәнең уңышын алыу. *Иген йыйыу. Картуф йыйыу. Сөгөлдөр йыйыу.*

**5.** Нимәнелер берәмләп туплау, экренләп булдырыу. *Коллекция йыйыу. Бүләк йыйыу. Йыр йыйыу. Экспонат йыйыу.*

**6.** Әҙләп туплап, күбәйтеү. *Байлыҡ йыйыу. Донъя йыйыу. Мал йыйыу.* ■ *Әй һылыуым, һиңә ни бирәйем, малдар һатып йыйған аҡсам юҡ* (Халыҡ йырынан).

**7.** Көстө, ҡыйыулыҡты һ. б. туплау, күбәйтеү. *Көстө йыйыу. Ҡыйыулыҡты йыйыу.* ■ *[Түрәбай] иң һуңғы ғәйрәтен йыйып, аяҡҡа баҫты.* Т. Хәйбуллин.

**8.** Бергә туплап, сағылдырыу. *Ерҙең-күктең биҙәктәрен йыйып, бейек шыршы тора уртала.* М. Кәрим. *Ай, Уралым, Уралым, .. бөтә данды үҙенә йыйып торған Уралым* (Ҡобайырҙан).

**9.** Йәйелеп, таралып киткән нәмәне кире алыу, урынына ҡайтарыу. *Суртанды күрһә, [яйыҡ] сәнскеләрен йыя, ауыҙына үҙе инеп киткәнен һиҙмәй ҙә ҡала.* Б. Бикбай. *Әбей яулығын эйәк аҫтынан салып бәйләне, аҡ сәстәрен яулығы эсенә йыйҙы.* Ф. Иҫәнғолов.

**10.** Ышаныслы, йәшерен урынға алып һалыу; йәшереү. *Алып йыйыу. Йыйып ҡуйыу.* ■ *Ҡамсыларымды, билгауҙарымды балдыҙҙар йыйып бөткән, аҡса биреп саҡ таптырып алдым.* М. Бураңғолов.

◆ **Зиһенде йыйыу** *шул уҡ* **аҡылды йыйыу** (*ҡар.* **аҡыл**). **Ем йыйыу** орлоҡланыу (игенгә ҡарата). *Арыштар һарғайышып, ем йыйып ултыра.* Ғ. Дәүләтшин. **Иҫте йыйыу** *ҡар.* **иҫ** 2. **Сәселгән ризыҡты йыйыу** ситкә сығып йөрөү. **Хәбәр йыйыу** төрлө һүҙ, ғәйбәт артынан ҡыуыу. **Хәл йыйыу** ял алыу, ял итеү. *Ултырып хәл йыйыу.* ■ *Йүгерек батыр хәл йыям тип ятып торған еренән йоҡлап киткән* (Әкиәттән). **Эсте йыйыу** *шул уҡ* **эс тартыу** (*ҡар.* **эс**). **Эскә йыйыу** йәшереп һаҡлау. *Асыуҙы эскә йыйыу. Үсте эскә йыйыу.*

● *Семтеп йыйһаң, услап ашарһың.* Мәҡәл.

**ЙЫЙЫУСЫ** *и.* Ниҙер йыйыу вазифаһын үтәгән кеше. *Яһаҡ йыйыусы. Тире йыйыусы.*

◆ **Хәреф йыйыусы** типографияла набор эшендә эшләүсе эшсе; наборщик.

**ЙЫЙЫШТЫРЫЛЫУ** *ҡ. төш. ҡар.* **йыйыштырыу** 2, 3. *Бүлмә матур итеп йыйыштырылған.*

**ЙЫЙЫШТЫРЫНЫУ** *ҡ.* Өй эсен тәртипкә килтереү, йыйыштырыу эше менән шөғөлләнеү. *Йыйыштырынып йөрөп, көндө кисләтеү.*

**ЙЫЙЫШТЫРЫУ** *ҡ.* **1.** Унан-бынан алып йыйыу. *Егет койолоп ҡалған башаҡтарҙы йыйыштырған кеше булып йөрөй ине* (Әкиәттән).

**2.** Таралған, сәселгән нәмәне йыйып, үҙ урынына ҡуйыу; йыйыу. *Китап, ҡағыҙҙы йыйыштырыу. Һауыт-һабаны йыйыштырыу.* ■ *Һалдаттар нәмәләрен йыйыштырып, сумкаларына тултыра.* Д. Юлтый. / Һәр нәмәне урын-еренә матурлап ҡуйып, тәртипкә килтереү. *Карауатты йыйыштырыу. Ҡура тирәһен йыйыштырыу. Мәктәпте йыйыштырыу. Өҫтәлде йыйыштырыу.* ■ *Миңлеямал өйөн йыйыштырҙы, селек һепертке менән иҙәнен һеперҙе.* Я. Хамматов.

**3.** *һөйл.* Үлгән кешене күмеү; ерләү; йыйыу.— *Батырҙың кәүҙәһе былай ерҙә ятып серемәһен. Беҙ уны, соҡор ҡаҙып, йыйыштырып китәйек* (Әкиәттән).

**ЙЫЙЫШТЫРЫУСЫ** *и.* Эш, уҡыу биналарын йыйыштырыу вазифаһын башҡарған кеше. *Йыйыштырыусы булып эшләү.*

**ЙЫЙЫШЫУ** *ҡ. урт. ярҙамл. ҡар.* **йыйыу** 1—5. *Еләк йыйышыу.*

**ЙЫҠ** *и. диал. ҡар.* **ыйыҡ** 1.

◆ **Йыҡ булыу** *йәки* **йыҡҡа сығыу** интегеү, аптырау. *Ауыҙынан бер һүҙе сыҡҡанса йыҡ булып бөтөлә.* М. Тажи. **Йыҡ тейгер** ҡарғағанда әйтелә.

**ЙЫҠМА** *с. диал.* Лаҡыл. *Йыҡма иҫерек.*

**ЙЫҠМАЛЫ** *с.* Йығып һалмалы. *Йыҡмалы яға.* ■ *Йыҡмалы ла көймә, ҡарама дуға ектерһәнә, Фатимам, туры атҡа* (Халыҡ йырынан).

**ЙЫҠТЫРЫУ** *ҡ. йөкм. ҡар.* **йығыу.** *Төкөтөп йыҡтырыу. Ағас йыҡтырыу.*

● *Кәрәк тирәк йыҡтыра.* Мәҡәл.

**ЙЫЛ** *и.* **1.** Ерҙең Ҡояш тирәһендә бер әйләнеп сығыуына тиң булған ваҡыт берәмеге (1 ғинуарҙан башланып, 12 айҙы эсенә ала). *Бер мең туғыҙ йөҙ һикһән дүртенсе йыл. Һәр йыл. Үткән йылғы. Һуңғы йыл. Йыл һайын. Йыл әйләнәһе. Йылҡы көтөүҙәре йыл уртаһына Урал тауҙарында йөрөй.* ■ *Үҙәбеҙҙең ауылда мин 1909 йылға тиклем уҡыным.* Т. Йәнәби. *Йыл артынан йыл үтте, ҡыш булды ла боҙ китте.* Салауат Юлаев. / Ҡайһылыр бер көндән алып иҫәпләнгән 12 ай араһы. *Бер нисә йыл. Нисәмә йыл. Йыл ярым. Бер йыл элек. Бер йыл буйы. Йылға яҡын. Йылына бер. Бер йылдан артыҡ.* ■ *[Бай:] Ошо йондоҙ ҡашҡа бейәм йыл да ҡасып ҡолонлай* (Әкиәттән). **Ай йылы** ай календары менән иҫәпләнгән йыл оҙонлоғо (ҡояш йылынан 11 көнгә кәм). **Йондоҙ йылы** ҡояштың күктә йондоҙҙарға нисбәтән бер әйләнгән ваҡыт араһы. **Йыл миҙгелдәре** йылдың һауа шарттары менән билдәләнгән дүрт ваҡыты: яҙ, йәй, көҙ, ҡыш. **Йыл мөсәле** боронғо иҫәп буйынса, йәнлек-хайуан исемдәре менән атап йөрөтөлгән 12 йыллыҡ ваҡыт әйләнәһе (сысҡан йылы, һыйыр йылы, барыс йылы, ҡуян йылы, аждаһа йылы, йылан йылы, йылҡы йылы, ҡуян йылы, маймыл йылы, тауыҡ йылы, эт йылы, дуңғыҙ йылы). *Сысҡан йылы — туҡлыҡ, ҡуян йылы — юҡлыҡ* (Һынамыштан). *Барыс йылында барын сәс, һис югында тары сәс* (Һынамыштан). **Календарь йылы** ҡабул ителгән календарь буйынса иҫәпләнгән йыл оҙонлоғо. **Ҡояш йылы** ҡояш календары менән иҫәпләнгән йыл оҙонлоғо. **Кәбисә йылы** 366 көндән торған йыл (дүрт йылға бер килә). **Милади йыл** мосолмандарҙа Ғайса пәйғәмбәрҙең тыуған көнөнән иҫәпләнгән хәҙерге календарь йылы. **Уҡыу йылы** бер йәйге каникул бөтөп, икенсеһе башланғанға тиклемге уҡыу ваҡыты. *Яңы уҡыу йылы.* **Һижрә йылы** Мөхәммәт пәйғәмбәрҙең Мәккәнән Мәҙинәгә килгән көнөнән алып ай хисабы менән иҫәпләнгән календарь йылы (милади йыл иҫәбе менән 622 йылдың 16 июленән башлана).

**2.** *күпл.* Тейешле рәт һаны менән килгәндә ун йыл эсендәге ваҡыт араһын белдерә. *Һикһәненсе йылдар. Ҡырҡынсы йылдар ваҡиғаһы.*

**3.** *күпл.* Шул бер нисә берәмектә эсенә алған ваҡыт араһы. *Революция йылдары. Һуғыш йылдары.* ■ *Минең өҫтән үткән ауыр йылдар йәшлегемде минең урланы.* Ғ. Хәйри.

◆ **Йылы тулыу** ҡуйылған ваҡыты етеү. *Йылы тулған паспорт. Йылы тулған һалдат.* **Яҡтылыҡ йылы** *астр.* яҡтылыҡ нурының бер йыл эсендә үтә торған юлына тигеҙ булған, йондоҙҙар араһын үлсәү өсөн алынған берәмек. **Яңы йыл** беренсе ғинуар көнө.

● *Бер йылға ҡуян тиреһе лә сыҙаған.* Мәҡәл. *Йәйҙең бер көнө йылды туйҙыра.* Әйтем.

**ЙЫЛА**[1] *и.* Оҙонсараҡ япраҡлы, көрәнһыу ҡабыҡлы беше ағас. *Тау йылаһы. Ялан йылаһы. // Йыла утын. Йыла кәртә.* ■ *Беҙҙә асыл йылҡы малын кәҙерләй белмәйҙәр. .. Ҡышҡы сатлама һыуыҡтарҙа ҡарағура ашаталар, яҙ буйы йыла кимерә.* Ж. Кейекбаев. *Мин илатып һуйып алдым йәш йыланың ҡабығын.* М. Кәрим.

**ЙЫЛА**[2] [*рус.* жила] *и. диал. ҡар.* **юлаҡ** 2. *Алтын йылаһы.*

**ЙЫЛАН**[1] *и.* **1.** Аяҡһыҙ нәҙек оҙон кәүҙәле, ҡайһы берҙәренең ағыулы теше булған һөйрәлеүсе йәнлек. *Ағыулы йылан. Йылан арбау.* **Йылан ҡабы** (*йәки* **ҡауы**) йыландың түләгәндә һыҙырып һалып киткән тиреһе. **Баҡыр йылан** *ҡар.* **тос йылан. Быуыр йылан** быуып үлтереп йота торған ағыуһыҙ йылан. **Еҙ йылан** *ҡар.* **тос йылан. Күҙлекле йылан** ике күҙе тирәһендә күҙлек һымаҡ түңәрәге булған ағыулы эре йылан (йылы яҡта була). **Сыбар йылан** аршын оҙонлоғондай, һор төҫтәге, ҡара сыбар йылан. **Тос-йылан** йылтыр һары төҫтәге бәләкәйерәк йылан (сыбыҡ менән һуҡҡанда өҙөлөп тора). **Туҙбаш йылан** түбәһендә һап-һары ике табы булған ҡара төҫтәге ағыуһыҙ йылан. **Һор йылан** *ҡар.* **сыбар йылан. Шағыр йылан** һырты шаҡмаҡ-шаҡмаҡ һыҙатлы буҙ төҫтәге йылан.

**2.** Бик яуыз, хәйләле, мәкерле кешегә ҡарата әйтелә. *«Ах, һин йылан!» — тип Абдрахман хыянатсыны асыу менән тибеп осорған да ҡылысын һул ҡулына алған.* Ә. Вахитов. **Ҡара йылан** 1) аршын оҙонлоғондай бик усал ағыулы йылан (һырты буйында кәкерсәк кенә ҡара һыҙаты була); 2 *күсм.* бик яуыз, мәкерле кешегә ҡарата әйтелә. **Юха йылан 1)** ырым буйынса, мең йәшәгән йылан; 2) *күсм.* сикһеҙ хәйләле, мәкерле яуыз кешегә ҡарата әйтелә.

**3.** *диал. ҡар.* **ҡылйылан** 1.

♦ **Аҡ йылан** аҡ төҫтәге мифик йылан; йылан батшаһы (йәнәһе, оҙонлоғо бер ҡарыштай ғына булған был йылан кешегә бик һирәк осрай, үлтерергә ярамай; аҡ әйберҙе алдына йәйһәң, мөгөҙөн һалып китә). **Ер аҫтында йылан көйшәгәнен белеү** бөтә нәмәне белеп, күреп тороу. *[Колкай:] Эй, тапмайҙармы һуң! Минең бисә тегеләй: ер аҫтында йылан көйшәгәнен белә. Ул тапмай ҡуямы ни!* М. Буранғолов. **Йылан аяғы** ырым буйынса, йыландың аяғы бар имеш тә, иң бәхетле кешегә генә күренә, имеш. **Йылан аяғын киҫкән** уҫаллыҡҡа, хәйләгә ныҡ өйрәнгән; үткер. *Мине яусы итеп ебәрергә булдылар. Был эштә мин, үҙең беләһең, йылан аяғын киҫкән ир.* Т. Килмөхәмәтов. **Йылан батшаһы** *ҡар.* **аҡ йылан. Йылан булып уралыу** хәйлә, мәкер менән алдау. **Йыландай телде сығарыу** бик ныҡ өҙәләнеү. *Йыландай телемде сығарып ялындым.* **Йылан йылы** ун ике йыллыҡ мөсәлдең алтынсы йылы. **Йылан кеҫәртке** һары бауыр кеҫәртке. **Йылан мөгөҙө** ырым буйынса, аҡ йыландың мөгөҙө (уны муйынға аҫып йөрөһәң, йәнәһе, ҡот килтерә). **Йылан мөгөҙө алыу** ҡот килеп, байыу. **Йылан мөгөҙө инеү** бәрәкәтле булыу, оҙаҡҡа етеү. **Йылан саҡҡан кеүек** ҡапыл терт итеп һикереп киткәндә йәки сар-сор ҡысҡырып ебәргәндә әйтелә. **Йылан тарыһы** *ҡар.* **тары. Йылан теле** һыуһылыраҡ ерҙә түмгәкләнеп, өйкөм-өйкөм булып үҫкән ваҡ ҡына башаҡлы, тар ғына ҡыяҡ япраҡлы ҡаты үлән. **Йылан телле** зәһәр, әсе телле. *Йылан телле кеше.* **Йылан эше** яуыз, мәкерле эшкә ҡарата әйтелә. *Бында ниндәйҙер йылан эше йөрөй.* С. Агиш. **Кәлтә йылан** *диал.* кеҫәртке. **Ҡуйында йылан аҫрау** *ҡар.* **ҡуйын.**

● *Йылы ергә йылан әйәләй.* Мәҡәл. *Йәне теләгән йылан ите ашаған.* Мәҡәл.

**ЙЫЛАН**[2] *и.* Бер башҡорт ырыуының исеме. *Иҙел йылан. Ҡыр йылан. Әске йылан.*

**ЙЫЛАНБАЛЫҠ** *и.* Оҙон йомро кәүҙәле, аҫлы-өҫлө буйҙан-буй һуҙылған йөҙгөслө, бәләкәй генә башлы, ҡараһыу төҫтәге йылға, күл балығы.

**ЙЫЛАНҠАРАҠ** *и.* Ҡаралай көйөп, бармаҡҡа сыҡҡан шешек.

**ЙЫЛАНСАЙ** *и. диал.* Йыланбалыҡ.

**ЙЫЛАН-САЯН** *и. йыйн.* Саға торған төрлө ағыулы йән эйәләре. *Урал күлде һура, ти, йылан-саян тула, ти. Берәм-берәм Уралдың йөрәк-бауырын телә, ти.* «Урал батыр».

**ЙЫЛАНУТ** *и. диал.* Монар.

**ЙЫЛАУҠАЙ**[1] *и. диал. ҡар.* **зыйтым** 2.

**ЙЫЛАУҠАЙ**[2] *и. диал.* Күпсегән ҡатыҡ.

**ЙЫЛАУЫҠ** *и. диал. ҡар.* **йылыу**[2].

**ЙЫЛБЫР-ЙЫЛБЫР** *окш.* Ваҡ-ваҡ баҫып, ашығып атлағанды белдергән һүҙ. *Йылбыр-йылбыр итеп йөрөү. Йылбыр-йылбыр килеү.*

**ЙЫЛБЫРЛАУ** *ҡ.* Йылбыр-йылбыр итеү, йылбыр-йылбыр килеү.

**ЙЫЛҒА** *и.* Үҙ үҙәне буйлап туҡтауһыҙ ағып ятҡан, ер аҫты һәм ер өҫтөндәге һыуҙар иҫәбенә байыҡҡан тәбиғи һыу. *Ҙур йылға. Киң йылға. Ҡороған йылға. Ташҡын йылға. Тәрән йылға. Ағиҙел йылғаһы. Тау йылғаһы. Йылға башы. Йылға тамағы. Йылға аръяғы. Йылға яры. Йылға балығы. Йылға һыуы. Йылғаға төшөү. Йылғаны сығыу.* ■ *Тирмәм тора көмөш кеүек йылға ярында. Хуш еҫле сәскәләр үҫә тирә-яғында.* Салауат Юлаев. **Йылға вокзалы** йылғалағы пассажир караптары туҡтай торған урын.

♦ **Йылға булып** бик күп булып (ағыу, ағылыу, ҡойолоу һ. б.). *Һуғыш ҡаты булды, ҡан йылға булып аҡты* (Әкиәттән).

● *Кисеү бирмәҫ йылға юҡ.* Мәҡәл.

**ЙЫЛҒАСЫ** *и.* Йылға флотында эшләгән кеше.

**ЙЫЛҒЫЙ** *р. диал.* Ылғый.

**ЙЫЛҒЫР** *с.* **1.** Хәрәкәткә бик етеҙ; йылдам. *Йылғыр кеше. Йылғыр ат. Йылғыр ҡош. Йылғыр булыу. // Йылғыр атлау. Йылғыр эшләү.* ■ *Йылғыр бала, етешмәгән ере юҡ.* М. Тажи. *Борғоланып йылғыр Һаҡмар аға, һыуға теклән ҡала таллыҡтар.* Р. Ниғмәти. *[Балалар] коньки шыуа, йылғыр саңғы менән парк буйлап китеп баралар.* М. Хәй. / Йор хәрәкәтле, тиҙ тотонған, эшләгән һ. б. *Аҡыллы, йылғыр ҡуллы ҡыҙыҡай токарлыҡ һөнәренә тиҙ өйрәнде.* Ә. Вәли. / Бик тиҙ, етеҙ башҡарылған. *Йылғыр хәрәкәт.*

**2.** *күсм.* Тормошта бик өлгөр; мут, отҡор. *[Миронов:] Ҡарап торам да мин һиңә: бик йылғыр, аҙғын егет күренәһең.* Н. Иҙелбай.

♦ **Йылғыр күҙле** алан-йолан ҡарап, бөтә нәмәне күреп торған кешегә ҡарата әйтелә.

**ЙЫЛҒЫРБАЙ** *с.* Тормошта үткер, мут (кешегә ҡарата). *[Мәктәптә] бер кем дә ҡурҡаҡ, һатлыҡ, йылғырбай кешеләр хаҡында ауыҙ ҡүтәреп һүҙ ҡуҙғатыуҙы кәрәк һанамай.* З. Биишева.

**ЙЫЛҒЫРЛАНЫУ** *к.* Етеҙ хәрәкәтлегә, йылғырға әйләнеү, йылғыр булыу. *Бөркөт балаларының хәрәкәте һаман йылғырлана бара.* Ғ. Әмири.

**ЙЫЛҒЫРЛАТЫУ** *к.* **1.** *һөйл.* Етеҙ хәрәкәтлегә, йылғырға әйләндереү.

**2.** Йылғыр хәрәкәт итеү; ашығыу. *Турысай ҙа атым ай еләлер, йылғырлатып килгән ҡош кеүек* (Халыҡ йырынан).

**ЙЫЛДАМ** *с.* **1.** Хәрәкәткә етеҙ; йылғыр, өлгөр. *Йылдам кеше. Йылдам ат. Йылдам булыу. // Йылдам атлау. Йылдам ҡуҙғалыу.* ▬ *Ҡарашы [егеттең] яҡты, аҙымы йылдам. Эштә, тормошта ул бара алдан.* Н. Иҙелбай. / Бик тиҙ, етеҙ башҡарылған. *Йылдам хәрәкәт.*

**2.** Бик әҙ ваҡыт эсендә башҡарылған, булған. *Халыҡ байлығының йылдам үсеше. // Промышленность йылдам үсә.*

● *Йылдам атҡа ҡамсы кәрәкмәй.* Мәҡәл.

**ЙЫЛДАМЛАНЫУ** *к.* Йылдамға әйләнеү, йылғырланыу. *Яҙ башында Эйек һыуы тағы ла йылдамлана, аҡ күбектәр сәсеп аға.* Ә. Вәли.

**ЙЫЛДАМЛАТЫУ** *к.* Хәрәкәтен тиҙләтеү, йылдамға әйләндереү. *Аҙымды йылдамлатыу.*

**ЙЫЛДАН-ЙЫЛ** *р.* Һәр йыл үткән һайын. *Өфө йылдан-йыл ҙурая.*

**ЙЫЛДЫ** *р.* Ниндәйҙер билдәле бер йылда. *Анау бер йылды. Теге йылды. Ул йылды.* ▬ *Беҙ уның менән бер йылды һабандаш булғайныҡ.* Б. Бикбай.

● *Ырыҫ килгән йылды эт башына ла эркет түгелә.* Әйтем.

**ЙЫЛДЫҢ-ЙЫЛЫ** *р.* Һәр йыл һайын. *Урман эсендә ятҡан аулаҡ тын күлдә йылдың-йылы аҡҡоштар йәйләй.* Ф. Иҫәнғолов.

**ЙЫЛДЫР: йылдыр арба** етеҙгә тотолған еңел арба; ҡырандас.

**ЙЫЛҠАНЛАУ** *к. диал.* Йылтанлау.

**ЙЫЛҠ-ЙЫЛҠ** *оҡш.* Уйнап, йылтылдап торған төҫтө белдергән һүҙ. *Йылҡ-йылҡ итеү.*

**ЙЫЛҠЫ** *и.* Кешене, йөктө һ. б. күсереү, ташыу өсөн файҙаланыла торған эре йорт малы; ат. *Йылҡы малы. Йылҡы көтөүе. Йылҡы көтөүсеһе. Йылҡы өйөрө Йылҡы ите. Йылҡы әйләү.* ▬ *Ул саҡта беҙҙең артелдә йылҡы малы бик күп ине. Һауын бейәләр генә әллә нисә өйөр, бынан башҡа тай-тулаҡ иҫәпһеҙ күп була торғайны.* Н. Мусин. *Аҡлы ғына күкле ала йылҡы тибен тибә тауҙың уңерендә* (Халыҡ йырынан). *Иртәнсәкәй тороп бер ҡараһам, туғайлыҡта йылҡы юшайҙыр* (Халыҡ йырынан).

♦ **Йылҡы йылы** мөсәл йыл иҫәбендә етенсе йыл.

**ЙЫЛҠЫЛДАҠ** *с.* Йылҡылдап торған. *Йылҡылдаҡ ҡар.*

**ЙЫЛҠЫЛДАТЫУ** *к.* Йылҡ-йылҡ иттереү; йылтылдатыу. *Ҡояш ап-аҡ ҡарҙы йылҡылдатып, алһыу нурҙарын түгә.* Ш. Янбаев.

**ЙЫЛҠЫЛДАУ** *к.* Йылҡ-йылҡ итеү; йылтылдау. *Мин .. йылҡылдап торған төлкө тиреһен Филип белешкә һондом.* С. Кулибай. *Үлән башын һыйпап үтте тау еле, ысыҡ тамды йылҡылдап көмөш кеүек.* М. Тажи.

♦ **Йылҡылдап тороу** туп-тумалаҡ һимеҙ малға әйтелә. *Колхоздың тибендә йөрөгән аттары .. матур, йылҡылдап тора.* А. Карнай.

**ЙЫЛҠЫЛДАШЫУ** *к. урт. ҡар.* **йылҡылдау.** *Уттар яна һәр бер өйҙә, һәр урамда. Йылҡылдашып күренә улар кис буранда.* Ғ. Ғүмәр.

**ЙЫЛҠЫН: йылҡын күҙ** *диал.* йылтын күҙ (*ҡар.* **йылтын**).

**ЙЫЛҠЫСЫ** *и.* Йылҡы ҡараусы, йылҡы көтөүсе. *Йылҡысы төнө буйы көткән йылҡыларын болонға таратып, ауылға ҡайта.* А. Таһиров.

**ЙЫЛҠЫСЫЛЫҠ** *и.* Йылҡы аҫрау, йылҡы үрсетеү эше. *Йылҡысылыҡ заводы. Йылҡысылыҡ хужалығы. Йылҡысылыҡты үҫтереү.*

**ЙЫЛҠ-ЯЛҠ** *оҡш. ҡар.* **ялҡ-йолҡ.** *Йылҡ-ялҡ итеү.* ▬ *Тау битендә йылҡ-ялҡ итеп шыңғыр шишмә шылтырай* (Халыҡ йырынан).

**ЙЫЛЛАҒАН** *с.* Бер йыл йәки бер нисә йыл ултырған, торған. *Йыллаған бал. Йыллаған бесән.* / Бер йәште тултырған, бер йәшлек (малға ҡарата). *[Ғәлекәй:] Иҫ китмәй ни? Йыллаған башмаҡ тиклем булыр. Шундай йырҡысты үлтереп ҡара әле!* Ш. Бикҡол.

**ЙЫЛЛАП** *р.* **1.** Йылы менән. *Йыллап түгел, көнләп үҫеү.*

**2.** Һандарҙан һуң килеп, сама менән билдәләнгән йыл иҫәбен белдерә. *Күрмәгәнгә ике йыллап булыр.*

**ЙЫЛЛАТЫУ** *к.* Бер йыл ултыртыу, бер йыл тотоу. *Кәбәнде йыллатыу.*

**ЙЫЛЛАУ** *с.* Йыл ултырған. *Йыллау бесән. Йыллау кәбән.* **Йыллау һуған** бер сәсеп йыл да үҫеп тора торған һуған.

**ЙЫЛЛЫҠ** *с.* **1.** Күпмелер йыл дауам итҡән, күпмелер йыл менән иҫәпләнгән. *Утыҙ йыллыҡ ғүмер.* ▬ *Ҡурайсы донъяла тиңе булмаған әлеге ҡыр ҡурайының йөрәктәрҙе өҙөрлөк моңо аша башҡорттоң ике йыллыҡ аҙаплы тарихын асып бирә.* Ғ. Дәүләтшин.

**2.** Һандар менән килеп, шул һандағы йыл эсендә булғанды, йәшәгәнде белдерә. *Бер йыллыҡ үҫемлек. Күп йыллыҡ үҫемлек.*

**3.** Күпмелер йылға тәғәйенләнгән, билдәләнгән. *Йыллыҡ план. Һигеҙ йыллыҡ мәктәп. // Биш йыллыҡ. Ярты йыллыҡҡа план төҙөү.* ▬ *Ғәжәпләнә торған заман түгел. Кәрәк икән, өс йыллыҡты өс айҙа өйрәнеп алаһың ул.* Һ. Дәүләтшина.

**4.** *и. мәғ.* Бер ваҡиғаға нисәлер йыл тулыуын билдәләгән көн. *Октябрҙең 70 йыллығын байрам итеү. Колхоздың 45 йыллығын үткәреү.*

**ЙЫЛЛЫҠЛАУ** *к.* Бер йыл иҫәбенән сығыу. *Йыллыҡлап эшләү. Йыллыҡлап түләү.*

**ЙЫЛМАҒАЙ** *с.* Төрлө хәйлә менән алдап-йолдап, ярамһаҡланып йөрөүсән. *Йылмағай кеше.*

**ЙЫЛМАЙТЫУ** *и. йөкм. ҡар.* **йылмайыу 1.** *Туҡта инде мин әйтәм, ваҡыт ҡына етһен, мин һине йылмайтырмын әле!* Д. Исламов.

**ЙЫЛМАЙЫУ** *к.* **1.** Йөҙгә көлөү билдәһе сығарыу; көлөмһөрәү. *Асыҡ итеп йылмайыу. Аҫтыртын ғына йылмайыу. Киң итеп йылмайыу. Күҙ ҡойроғо менән йылмайыу. Йылмайып көлөү.* ▬ *Көтөүсе Язар күңелендәге шатлыҡҡа түҙә ал-*

*май көлә, уратып алған кешеләрҙең күҙҙәренә ҡарап йылмая.* Б. Ишемғолов. *Бер ҡараһам һиңә, күңелем була, бер йылмайып ҡараһаң да ни була* (Халыҡ йырынан).

**2.** *күсм.* Салт асыҡ, нурлы, матур төҫ алыу. *Ай йылмая. Йондоҙҙар йылмая. Таң йылмая.* ■ *Гөлдәр йылмайған, ҡырҙар нурланған.* Ш. Бабич. *Йылмая ҡояш, үбә битемдә.* Р. Назаров.

**ЙЫЛМАЙЫУЛЫ** *с.* Йылмайыу сағылдырған. *[Тайморзин:] Ғәфү итегеҙ, Рәшиҙә Әскәровна, мин фекеремде әйтеп бөтөрәйем инде,— үҙе Сәгиҙәгә йылмайыулы ҡараш ташлап ҡуйҙы.* М. Тажи.

**ЙЫЛМАЙЫШЫУ** *к. урт. ҡар.* **йылмайыу.** *Ишек алды тулы бала-саға. Улар араһында йылмайышып тәрбиәселәр йөрөй.* Р. Низамов.

**ЙЫЛМАНЛАҠ** *с.* Йылманлап йөрөүсән. *Йылманлаҡ ҡатын.*

**ЙЫЛМАНЛАУ** *к.* Күҙҙе йылтыратып борғоланыу; ҡылансыҡланыу. *Йылманлап йөрөү.* ■ *Саҡ ҡына аулаҡ ҡалһа, кәйнеш тигән булып, йылманлап, үҙе килеп бөйөргә төртә.* Һ. Дәүләтшина. *Тыш яҡтан йылманлап, дошмандар төшкәндәр беҙ төшкән юл менән, яҙыҡлы, ләғнәтле ҡул менән беҙ ҡосҡан баланы ҡосҡандар.* Ш. Бабич. *Күҙең-башың йылманлап, күҙсән булма, киленсәк* (Туй йырынан).

**ЙЫЛМАУЫҘ** *и. ҡар.* **ялмауыҙ.**

**ЙЫЛМАЯҠ** *с. һөйл.* Тиләҫкеүләнеп күп йөрөүсән; мөстән. *Бик йылмаяҡ ҡыҙ ине Ләлә. Ҡайҙа кисә булһа — шунда саба.* Н. Мусин.

**ЙЫЛМАЯҠЛАНЫУ** *к. һөйл.* Тиләҫкеүләнеп йөрөү; мөстәнләнеү. *[Әбей:] Һин ҡайтҡанһың икән, кеше бармы тип торам. Нишләп улайтып йылмаяҡланып йөрөйһөң?* Һ. Дәүләтшина.

**ЙЫЛМЫЛДАУ** *к.* Йым-йым итеп ялтырау. *Тау битендә, алыҫта, күктәге йондоҙҙар һымаҡ, лампа уттары йылмылдай.* Ж. Кейекбаев. *Һыу өҫтөндә йәш ай йөҙә йылмылдап.* С. Әлибаев.

**ЙЫЛМЫЛДАШЫУ** *к. урт. ҡар.* **йылмылдау.**

**ЙЫЛМЫРЛАУ** *к. диал.* Йылмылдау.

**ЙЫЛП** *оҡш.* Ҡапыл ғына етеҙ хәрәкәтте белдергән һүҙ. *Йылп итеү.* ■ *[Төлкө] йылп итеп сауҡалыҡҡа инеп юғалды.* Ғ. Шәрипов. *Биксән ағай йылп иттереп ҡатынына ҡарап алды.* Р. Солтангәрәев.

**ЙЫЛПАҪ** *с. диал.* Лыпын йығылған. *Борсаҡ яуһа, иген йылпаҫ булып бөтөр ҙә ҡуйыр инде.*

**ЙЫЛП-ЙЫЛП** *оҡш.* Бер һүнеп, бер ҡабынып киткән ялҡынды белдергән һүҙ. *Йылп-йылп итеп яныу.*

**ЙЫЛПЫ** *с. ҡар.* **йылпыс.** *Әбей, оло йәштә булыуына ҡарамаҫтан, йылпы ғына күренә ине.* В. Исхаҡов.

**ЙЫЛПЫЛДАҠ** *и. диал.* Һуҡыр шәм.

**ЙЫЛПЫЛДАУ** *к.* Бер һүнеп, тағы тоҡанып китеү. *Һуҡыр шәм йылпылдап ултырҙы ла һүнде.*

**ЙЫЛПЫС** *с. һөйл.* Ҡыланырға яратҡан, ҡыйпысыҡ (күберәк ҡыҙ балаға ҡарата). *Йылпыс булыу.*

**ЙЫЛТ**[1] *оҡш.* Ҡапыл булған етеҙ хәрәкәтте белдергән һүҙ. *Йылт итеп боролоу.* ■ *[Шәм дә] йылт итеп һүнеп ҡуйҙы.* Һ. Дәүләтшина. *Йылт итеп Сәлмән ағай килеп инде.* Т. Йәнәби. *[Йәш эшсе] йылт итеп Азаматов яғына ҡарап алды.* Ә. Вәли. / Тиҙ-тиҙ генә эш итеүҙе белдерә. *[Исмәғил] асыҡҡан ине. .. Алдындағын йылт иттереп ҡуйҙы.* Я. Вәлиев.

**ЙЫЛТ**[2]: **йылт ҡара** йылтылдап торған ҡара; сөм ҡара. *Татлыбай .. аҡ күлдәге өҫтөнән йылт ҡара камзулын кейҙе.* Ш. Шәһәр.

**ЙЫЛТАН** *с. диал.* Йылтанлаҡ.

**ЙЫЛТАНЛАҠ** *с.* Ҡылансыҡланып, һырғаланып тороусан; ҡыйшанлаҡ (ҡатын-ҡыҙға ҡарата). *Йылтанлаҡ ҡыҙ.*

**ЙЫЛТАНЛАТЫУ** *к.* Ялт-йолт уйнатыу (күҙҙе, башты). *Күҙҙәрен йылтанлатып, ҡойроғон уңға-һулға һелтәп, бер бүре арҡандың төйөнө менән уйнап килә.* С. Кулибай.

**ЙЫЛТАНЛАУ** *к.* **1.** Ялт-йолт уйнау (күҙгә, башҡа ҡарата). *Төлкөнөң ҡолаҡтары ҡарпайып киткән, күҙҙәре йылтанлап, ауыҙынан шеләгәйе ҡойола башлаған.* Ж. Кейекбаев.

**2.** Күҙҙе йылтыратып ҡылансыҡланыу; ҡыйшаңлау. *Йылтанлығы сығыу.*

**ЙЫЛТ-ЙЫЛТ** *оҡш.* Ҡабат-ҡабат йылт иткәнде белдергән һүҙ. *Вагон тәҙрәһенән дачалар йылт-йылт итеп күренеп ҡала.* ■ *Ҡояш нурҙарында ялтыр таш киҫәктәре .. йылт-йылт итеп китә.* Ғ. Ғүмәр.

**ЙЫЛТЛАУ** *к.* Йылт итеп ялтырау. *Зинунәнең ҙур ҡара күҙҙәре йылтлап китте.* Ә. Вәли. *Йылтлап уйнай күктә йондоҙҙар.* Ғ. Амантай.

**ЙЫЛТЫҠАЙ** *и. диал.* Һуҡыр шәм.

**ЙЫЛТЫЛДАҠ** *с.* Йылтылдап торған. *Йылтылдаҡ калай.*

**ЙЫЛТЫЛДАТЫУ** *к.* Йылт-йылт ялтыратыу. *Күҙгөнө йылтылдатыу.*

**ЙЫЛТЫЛДАУ** *к.* Йылт-йылт итеп ялтырау. *Байып барған ҡояш яҡтыһында һалдат мылтыҡтары йылтылдай.* Р. Бикбаев.

**ЙЫЛТЫН: йылтын күҙ** 1) йылтанлап уйнап торған үткер күҙ; 2) баланы ҡурҡыта торған бапаҡ.

◆ **Йылтын шәм** *диал.* Һуҡыр шәм.

**ЙЫЛТЫР** *с.* **1.** Йылт-йылт итеп, ялтырап торған; ялтыр. *Йылтыр самауыр. Йылтыр таш.* ■ *Йылтыр ғына йылтыр уттар яна, юлаусылар ҡунған ер, буғай* (Халыҡ йырынан). **Йылтыр ҡара** йылтылдап торған сөм ҡара. *Йылтыр ҡара бәрхәт.* **Йылтыр күҙ** йылтлап уйнап торған шаян күҙ.

**2.** *и. мәғ. күсм. һөйл.* Араҡы. *[Ғәлимә:] Ҡана, кәйнеште һыйларға йүгереп бара һалып, бер йылтырҙы килтерәйем.* Б. Бикбай.

**ЙЫЛТЫРАҠ** *с.* **1.** Йылтырап торған. *Йылтыраҡ нәмә.* ■ *Ә йылтыраҡ күҙле теге Мәтәй ун биш һумлыҡ бүрек килтергән.* Т. Арслан.

**2.** *и. мәғ.* Йылтырап торған нәмә. *Йылтыраҡтар таҡҡан ҡатын.*

● *Йыландың йылтырағанына ышанма.* Мәҡәл.

**ЙЫЛТЫРАҠ-ЙЫШЫРАҠ** *и. йыйн. ҡар.* **йылтыр-йышыр.**

**ЙЫЛТЫРАТЫУ** *к.* Йылт итеп балҡып торорлоҡ итеү; йылтыр итеү; ялтыратыу. *Сыуаҡай әбей .. йылтыратып йышып ҡуйған еҙ таҫҡа йылы һыу һалып, мулла алдына килтереп ултыртты.* З. Биишева.

**ЙЫЛТЫРАУ** *к.* Йылт итеп балҡыу; йылтырлау, ялтырау. *Йылтырап торған сәс. Йылтырап торған теш.* ■ *Һыуҙары терегөмөштәй йылтырап ағып тора.* Р. Ниғмәти. *Бер генә өйҙә [караҡтар] йылтырап янған ут күрҙе, ти* (Әкиәттән). / Йышылып шымарыу. *Керләнеп, йылтырап, ҡайышҡа әйләнгән таҡыяһын ҡырын кейеп, .. Әлекәй килә.* Т. Хәйбуллин.

**ЙЫЛТЫРАУЫҠ** *с.* **1.** Йылтыр булып балҡыған (нәмәгә ҡарата). *Йылтырауыҡ уйынсыҡ.*

**2.** *и. мәг.* Йылтырап торған нәмә. *Эске матурлығы булмаған кеше — күҙгә йылтырауығы ғына бит инде ул.* З. Биишева. *[Шыршының] ботаҡтарына әсәһе уйынсыҡтар, йылтырауыҡтар элде.* М. Кәрим.

**ЙЫЛТЫРАУЫҠЛЫ** *с.* Йылтыр булып балҡыған. *Йылтырауыҡлы тотҡа.*

**ЙЫЛТЫРАШЫУ** *к. урт. кар.* **йылтырау.** *Йылтырашып ятыу.*

**ЙЫЛТЫРҒАН** *и.* **1.** Ҡатлауланып ҡубып торған үтә күренмәле минерал. *Һарғылт гәрәбәгә оҡшаш йылтырған киҫәгенән .. эшләнгән брошка ине был.* Ҡ. Ибәтуллин.

**2.** *диал.* Гәлсәр таш (*кар.* **гәлсәр**).

**ЙЫЛТЫР-ЙЫШЫР** *и. йыйн.* Күҙгә күренерҙәй арыуыраҡ нәмәләр (өй эсендәге). *Өй эсе йылтыр-йышыр менән шыплап тултырылған.* Б. Бикбай.

**ЙЫЛТЫРЛАТЫУ** *к.* Йылт-йылт итеп балҡытыу; йылтыратыу. *Йондоҙҙо йылтырлатыу.*

**ЙЫЛТЫРЛАУ** *к.* Йылт-йылт итеп балҡыу; йылтырау. *Үлән баштарында ысыҡ йылтырлай.*

**ЙЫЛТЫРЛАШЫУ** *к. урт. кар.* **йылтырлау.**

**ЙЫЛТЫРМА** *и.* Ҡармаҡ төбөнә ҡуйылған алдатҡыс йылтыр тимер. *Бер ағы еҙ, икенсе ағы ҡурғаш йылтырма алып килгәйнек. Уныһын да сумдырып ҡараныҡ. Исем өсөн һуҡыр бер балыҡ ҡапһасы.* А. Ғирфанов.

**ЙЫЛЪЯҘМА** *и.* Боронғо Рәсәйлә: тарихи ваҡиғаларҙы йыл һайын теркәй торған яҙыу. *Боронғо рус йылъяҙмалары.* / Ваҡиғаларҙың төрлө даими яҙмаһы; көндәлек, хроника. *Мәктәп йылъяҙмаһы.*

**ЙЫЛЫ** [1] I *с.* **1.** Ғәҙәттәгенән юғарыраҡ температуралы; эҫегә тартым; *киреһе* һыуыҡ. *Йылы мейес. Йылы мунса. Йылы нур.* ■ *Арҡаға йылы ҡояш төштө.* Д. Юлтый. / Температураһы ғәҙәттәгенән юғары, бик һыуыҡ түгел. *Йылы аш. Йылы һыу. Йылы буран. Йылы ел. Йылы ямғыр.* ■ *Бер урында ҡатындар яңы һауған йылы һөттәрен .. күнәктәргә, һабаларға ҡойоп йөрөй.* Ш. Шәһәр. *Таң менән йылы сәй эсте тә, кейенеп санаға ултырҙыҡ.* Ғ. Дәүләтшин. / Һауаһы юғары температуралы, һыуыҡтары бик булмаған (һауа, йыл миҙгеле, тәүлеккә ҡарата). *Йылы көн. Йылы яҙ.* ■ *Тышта буран баҫыла төшкәйне. Төн йылы. Ел юҡ.* Б. Бикбай. *Инде донъя йәмле, һөйөнөслө, йылы апрель көтә.* Ш. Бабич. **Йылы ҡулда** көн йылы саҡта. *Ишектән һыуыҡ инеп тора, йылы ҡулда йүнәтеп ҡуйырға кәрәк.* / Һауаһы уртаса температуранан юғары (ергә, климатҡа ҡарата). *Йылы яҡтар. Йылы климат.*

**2.** Тәнде һыуыҡтан яҡшы һаҡлай торған. *Йылы кейем. Йылы тун. Йылы шәл. Йылы юрған.* ■ *Ауыл кешеһе .. йылы түшәктәр өҫтөндә йәйеләп, рәхәтләнеп, тәмле йоҡоға талған.* Ғ. Дәүләтшин.

**3.** Һалҡын көндәрҙә лә бик һыуынмай торған, елде, һыуыҡты үткәрмәй торған. *Йылы квартира.* ■ *Уларға [малдарға] ҡыйыҡлы, һыу үткәрмәй торған йылы ҡура кәрәк түгелме ни?* Т. Йәнәби. — *Ҡыҙған бабай!.. Туңам. Индер йылы торлаҡҡа!* Ғ. Амантай. // *Өй йылы тотолдо, быҙауҙарҙы тамаҡтан өҙмәнеләр.* Б. Бикбай.

**4.** *күсм.* Күңелгә хуш килерлек; яғымлы. *Йылы хат. Йылы һүҙ ишетеү. Йылы һүҙ әйтеү.* // *Йылы ҡаршылау.* ■ *Ҡайта, тигән йылы хәбәр менән тирәк шаулай тәҙрә төбөндә.* М. Хәй. *Директорҙың ҡоро, ләкин йылы әйтелгән һүҙҙәре иретеп ебәрҙе.* Б. Бикбай. *Улар [Даша менән Маруся] Айбулатты бик йылы ҡаршы алды.* Һ. Дәүләтшина. / Кемгә йәки нимәгәлер ҡарата ихлас күңеллелек, һөйөү тойғоһо менән һуғарылған. *Йылы мөнәсәбәт. Йылы өмөт. Йылы тойғо. Йылы тәьҫир.* ■ *Дөрөҫөндә уның [Йәнтимерҙең] миңә бик яҡын, бик йылы дуҫлығы бар.* С. Агиш. *Элек, аралары йылыраҡ саҡтарҙа, ул иртүк Яҡуп күршеһен тура килтереп: «Күрше, кәртә-ҡураң тирәһен ҡараштырып ҡуй, ул-был урланған нәмә ташлап китмәһендәр..»,— тип иҫкәртеп ҡуйғылай торғайны.* Б. Бикбай. / Ихлас күңеллелекте, һөйөү тойғоһон сағылдырған. *Ул [Кәримә апай] миңә һәр ваҡытта йылы йөҙ күрһәтә, күңелендәге булған апалыҡ мөхәббәтен изһар итә.* М. Ғафури. *[Сәйет — танышына:] Һинең йөҙөң бик яҡты, ҡарашың йылы, бәлки шуға ла күңел һине яҡын, таныш тойғандыр.* Ә. Вахитов. *Сәйҙел йылы итеп йылмайҙы.* Ғ. Сәләм.

**5.** *күсм.* Иҫкереп юйылмаған, онотолмаған; яңы. *Һөйләшеп ултырыуҙар бер генә булманы, әлбиттә. Ләкин йылы сағында яҙып ҡалдырмағанлыҡтан, ҡүбеһе онотолған.* С. Кулибай.

II *и.* **1.** Эҫе менән һыуыҡ араһындағы хәл; нимәлер юғары температураһы һәм шул нәмәнең тыны. *Усаҡ йылыһы. Ҡул йылыһы.* ■ *Ҡышҡы ҡояш көлөп торһа ла йылыһы юҡ.* Ш. Янбаев. *Маһира Әмиргә күрәген бирҙе лә китеп барҙы. Әмир, Маһираның ус йылыһы ла китмәгән көрәк һабына таянып артынан ҡарап ҡалды.* Х. Ғиләжев. / Температураһы ғәҙәттәгенән юғары булып, эҫе менән таралған, бәрелгән һауа. *Мейестән талғын йылы бәрә.* Б. Бикбай.

**2.** Температураһы ғәҙәттәгенән юғарыраҡ булған урын. *Әлфиә [атаһының] туң бейәләйҙәрен алып, усаҡ өҫтөнә йылыға һалды.* Һ. Дәүләтшина.

**3.** Температураһы ғәҙәттәгенән юғарыраҡ булған йыл, тәүлек миҙгеле. *Яҙ йылыһы тышҡа саҡыра.* ■ *Өс көн буйына яуған ямғырҙан һуң көндәр йылыға тартты.* «Совет Башҡортостаны», 1986, 30 апрель.

**4.** *күсм.* Яғымлы, яҡын тойғоноң тәьҫире. *Йөрәк йылыһы. Мөхәббәт йылыһы.* ■ *[Ивановтың] һүҙе күңелгә йылы бирҙе.* Д. Юлтый.

◆ **Йылы ҡулдан** биргән ыңғайы, ҡулдан алғас та. *[Ғариф:] Йә әле, Шәрәфи, йылы ҡулдан берҙе эсеп ебәр.* И. Насыри. **Эскә йылы инеү** ҡурҡыныс-маҙар бөтөп, күңелгә еңеллек килеү.— *Ярар, бер юлға хөкөм сығармайбыҙ, ..*

*эммә кабат судлашып йөрөмәгеҙ,— тине судъя. Минең эскә йылы инеп калды.* С. Кулибай.

● *Йылыға йылан эйәләй.* Мәкәл. *Йылы һөйәк һындырмай.* Мәкәл. *Йылы һүҙ йән аҙығы, яман һүҙ баш казығы.* Әйтем. *Тун йылыһы — иңдән төшкәнсә, дуҫ йылыһы — гүргә киткәнсә.* Әйтем.

**ЙЫЛЫ** [2] *р. һөйл.* Кайһылыр йылда; йылды. *Анау йылы. Ауылға кайткан йылы.*

**ЙЫЛЫКАЙ** *с. ирк. кар.* **йылы** [1]. *Йылыкай тун — куян тун, үҙе йомшак, үҙе ак.* Ғ. Шәмсетдинов. *Көн битендә йылыкай.*

**ЙЫЛЫЛЫК** *и.* **1.** *физ.* Атом һәм молекулалар хәрәкәте бик кыҙыулашкандан есемдең температураһы күтәрелеү менән билдәләнгән энергия. *Есемдең йылылык һыйышы. Химик энергияның йылылыкка әүерелеүе. Йылылыктың механик эквиваленты.* / Есемдең йылыныу дәрәжәһе; температура. *Һауаның йылылығы. Һыуҙың йылылығы.*

**2.** *күсм.* Ниҙеңдер йәнгә рәхәт биргән шаукымы. *[Әсә] күҙҙәренән әйтеп аңлаткыһыҙ йылылык бөркөлә.* Ф. Исәнғолов. *[Зәйнәптең] үҙ өйҙәре бып-буш, йылылык юк, Сәйҙеле лә әле кайтмаған.* Ғ. Сәләм.

**ЙЫЛЫМ** *и.* Ҙур һөҙгө. *Йылым тартыу.* ■ *Ярға сығарғас кына, ҙур бер йәйен йылымды йыртып сығып каса.* И. Насыри.

**ЙЫЛЫМСА** *с. диал.* Йылымыс.

**ЙЫЛЫМЫК** *с. диал.* Илгәҙәк. *Йылымык катын.*

**ЙЫЛЫМЫС** *с.* Әҙ генә йылы [шыйыклыкка карата). *Йылымыс булыу. Йылымыс итеү.* ■ *Битте иртәнсәк һалкын, ятыр алдынан йылымыс һыу менән йыуырға кәрәк.* В. Ғүмәров.

**ЙЫЛЫМЫСЛАНЫУ** *к.* Йылымыска әйләнеү. *Һыу йылымысланған, алюмин тәме сығып өлгөргән.* Ш. Янбаев.

**ЙЫЛЫМЫСЛАУ** *к.* Йылымыс хәлгә килтереү, йылымыс итеү. *Һыуҙы йылымыслап йыуыныу.*

**ЙЫЛЫНДЫРЫУ** *к.* **1.** Йылытып, өшөгәнде бөтөрөү. *Эс йылындырырлык кына йылы сәй эстек.* Ғ. Дәүләтшин.

**2.** *эйһ. ф. кар.* **йылыныу 1.** *[Ғәббәс] сума торғас, өшөнө, .. үҙе калтырап тора. «Нығырак калтыраһаң,— ти ул,— тиҙерәк йылындыра».* А. Игебаев.

**ЙЫЛЫНЫУ** *к.* **1.** Йылы алып, өшөүҙән туктау. *Ғәләү .., аттарын туғарып, өйгә йылынырға инде.* Т. Йәнәби. *Күлдәктәрем коро, тик салбарым ғына һыуланған. Күлдәк, ыштанды кейеү менән тән йылынғандай итте. Ләкин калтырау бөтмәне.* Д. Юлтый. *Кыҙрас .. бер кәбән аҫтына инеп, йылынып йоклап киткән* (Әкиәттән).

**2.** Һыуыктан йылыға әйләнеү, йылы хәлгә килеү. *Аш йылынды. Өй йылынған.* ■ *Көҙгө кояштың тауҙан артылып сығыуы менән көсһөҙ кырау йылынып һыуға, унан быуға әйләнеп, күҙҙән юғала.* Ғ. Дәүләтшин.

**3.** Температураһы ғәҙәттәгенән юғарырак хәлгә килеү (көнгә, һауаға карата). *Төш алдынан көн аяҙытып китте. Кояш күренде. Әллә беҙ тирләгәнгәме, әллә ысынлапмы, һауа йылынған кеүек булды.* Д. Юлтый.

◆ **Эс йылыныу** *шул ук* **эскә йылы инеү** (*кар.* **йылы** [1]).

**ЙЫЛЫТКЫ** *с. һөйл.* Йылытылған (ашка карата). *Йылыткы аш.*

**ЙЫЛЫТКЫС** *и.* Ниҙе лә булһа йылыта торған нәмә. *Комло йылыткыс. Һыулы йылыткыс. Электрлы йылыткыс.*

**ЙЫЛЫТЫЛЫУ** *к. төш. кар.* **йылытыу 3.** *Өй пар менән йылытыла.*

**ЙЫЛЫТЫУ** *к.* **1.** Үҙ йылыһын биреү. *Көҙгө кояш һаран йылыта. Мейес насар йылыта, һүтеп, яңынан сығарырға кәрәк.* / Йылыны тотоу, һыуыктан һаклау (кейемгә карата). *Тун нык һыуыктарҙа ла тәнде якшы йылыта.*

**2.** Өшөгәнен бөтөрөү; йылындырыу. *Аякты йылытыу. Кулды йылытыу.* ■ *[Һыуһылыу — Һәүбәнгә:] Кояш һине йылытыр, мине майҙай иретер.* «Акбуҙат». *Кыҙҙар кулдарын йылытып, яңынан бәрәңге сүпләргә тотонғас, Йәмил усак янына килеп ултырҙы.* Й. Мостафин.

**3.** Һыуыктан йылыға әйләндереү, йылы итеү. *Аш йылытыу. Һурпа йылытыу.* ■ *Кышкы сатлама һыуык көндәрҙә лә ул [Каран йылғаһы] туңмай. Һалкын һауаны йылытырға тырышкандай, йылы бәҫен кукка һибеп, ашыкмай ғына аға ла аға.* Я. Хамматов.

**4.** Температураһы ғәҙәттәгенән юғарырак хәлгә килеү (көнгә, һауаға карата). *Иртәнсәк буранлап, һыуытыбырак торған көн төшкә табан капыл йылытты.* Я. Хамматов.

**5.** *күсм.* Йылы тойғо уятыу, рәхәтлек биреү. *Йөрәкте йылытыу.* ■ *Хәтмулланың күңелен әллә ниндәй кыуаныс йылыта.* Д. Исламов.

**6.** *эйһ. ф. кар.* **йылыныу 3.** *Марттың тәүге аҙналарында ук йылытып ебәрҙе.* Ф. Исәнғолов.

◆ **Арка йылытыу** *кар.* **арка.**

**ЙЫЛЫУ** [1] *к. һөйл.* Һыуыктан йылыға әйләнеү. *Аш йылыны. Көн йылыны. Өй йылыны.*

**ЙЫЛЫУ** [2] *и.* Һыуҙың кыш көнө туңмай яткан урыны; каран. *Ашкаҙаркай буйы бороу-бороу, бороуҙары һайын бер йылыу* (Халык йырынан).

**ЙЫЛЫУЛАУ** *к.* Йылыуулы булыу, туңмау (һыуға карата). *Йылғаның йылыулап яткан ере.*

**ЙЫЛЫШТЫРЫУ** *к. диал.* Һырлыктырыу.

**ЙЫЛЫШЫУ** *к. диал.* **1.** Һырлығыу. *Балыксылар ут эргәһенә йылыша төштө.* Ғ. Ғүмәр.

**2.** Шылышыу. *Ипәштәр бер нәмәнән дә куркмай алға йылышты.* Ш. Хоҙайбирҙин.

**ЙЫМ** [1] *с.* Шыма, йылтыр. *Тукмағас, киндер йым ғына була.*

**ЙЫМ** [2] *с. диал. кар.* **йыш 1.** *Йым текмә.*

**ЙЫМ** [3] *с. диал. кар.* **бысый 1.**

**ЙЫМАЯК** *с. диал.* Йылмаяк.

**ЙЫМҒЫРЫУ** *к.* **1.** Калай һауыттың ситен сүкеп бөгөү, кайтарыу. *Күнәктең ауыҙын йымғырыу.*

**2.** *күсм.* Һуғып йәмшәйтеү. *Йымғыра һуғыу.*

**ЙЫМЙЫЛДАУ** *к. диал.* Йымылдау.

**ЙЫМ-ЙЫМ** *окш.* Валкып-балкып киткән яктылыкты, утты белдергән һүҙ. *Кояш сыға башлай, нурҙарында йым-йым итә Урал таштары.* Ғ. Сәләм. *Шәмдең уты һинең тыныңдан йым-йым килә кеүек бөгөн дә.* Р. Бикбаев.

**ЙЫМЛАУ** [1] *к.* Шымартып йылтыратыу. *Ҡаба менән етен йымлау.*

**ЙЫМЛАУ** [2] *к. диал. ҡар.* **йышлау** 1. *Иҙәнде йымлап түшәү.*

**ЙЫМЛЫ** *с. диал. ҡар.* **йыш** 1. *Йымлы бура. Йымлы булып ятыу. Йымлы итеп бурау.*

**ЙЫМШАН** *и. диал.* Әрем.

**ЙЫМЫЛДАТЫУ** *к.* Йым-йым иттереү, йым-йым килтереү. *Һин йылмайҙың төшлөк ҡояшында йымылдатып тештәр ап-ағын.* Х. Ҡунаҡбай.

**ЙЫМЫЛДАУ** *к.* Йым-йым итеү, йым-йым килеү. *Йондоҙ йымылдай. Ҡар йымылдай. Һыу өҫтө йымылдай. Шәм йымылдай.* ▬ *Ишек алдындағы алабута, кесерткән япраҡтарында ҡырау йымылдап ята.* З. Биишева.

**ЙЫМЫЛДАШЫУ** *к. урт. ҡар.* **йымылдау.** *Күктә йондоҙҙар йымылдаша.*

**ЙЫМЫЛ-ЙЫМЫЛ** *окш. ҡар.* **йым-йым.**

**ЙЫМЫРЛАУ** *к.* Бер тирәлә ҡайнашып ҡыбырлау; ҡымйыу. *Юлдаштары [ҡарт] әйләнәһендә йымырлай.* Й. Солтанов.

**ЙЫМЫТЫР** *и. диал.* Мөлкәт.

**ЙЫНАЗА** [*гәр.*] *и.* Ҡәбергә алып китер алдынан мәйет эргәһендә уҡыла торған намаҙ. *Йыназаһыҙ күмеү.* ▬ *Сит илдәрҙә йөрөп вафат булһам, йыназамды уҡып, кем ҡуйыр* (Халыҡ йырынан). **Йыназа ағасы** йыназа уҡығанда мәйетте һалыу өсөн яһалған урын. *Әсәйҙең кәүҙәһен күтәреп, йыназа ағасына сығарып һалдылар.* М. Ғафури.

**ЙЫНАЗАЛАУ** *к.* Йыназа уҡытыу. *[Батырша:] Тик әле бына илдең бер аҙаматы, бынамын тигән бер ир-егете үлгәс, йыназалап тәрбиәләп ҡуяйыҡмы тип йөрөгән йөрөш бит инде.* Һ. Дәүләтшина.

**ЙЫНЫС** *и. диал.* Енес.

**ЙЫП-** *киҫ.* Йы- ижеге менән башланған төп сифат һәм рәүешкә ҡушылып, артыҡлыҡ дәрәжәһе бирә. *Йып-йылтыр. Йып-йылы. Йып-йыш.*

**ЙЫП-ЙЫП** *окш.* Асылып-йомолоп, йылпылдап торған нәмәне белдергән һүҙ; леп-леп. *Йып-йып итеү. Йып-йып килеү.*

**ЙЫПҠЫ** *и. диал.* **1.** Уйпат.

**2.** *ҡар.* **ек** [1].

**ЙЫПҠЫУ** *с. диал.* Иңкеү.

**ЙЫПТЫР** *с. диал.* Мыштыр; ығыш.

**ЙЫПЫҠАС** *с. диал.* Ҡыйпысыҡ.

**ЙЫПЫЛДАҠ.** *с.* Ярамһаҡланып, ҡыйшанлап тороусан (ҡатынға ҡарата).

**ЙЫПЫЛДАТЫУ** *к.* Йып-йып иттереү, йып-йып килтереү. *Күҙҙе йыпылдатыу.*

**ЙЫПЫЛДАУ** *к.* **1.** Йып-йып итеү, йып-йып килеү. *Күҙе йыпылдап тора.*

**2.** Йып-йып итеп ҡыйшанлау; ярамһаҡланыу (ҡатын-ҡыҙға ҡарата). *Йыпылдап тороу.*

**ЙЫПЫРТЫУ** *к.* **1.** *һөйл.* Алдағыны ҡалдырмай тиҙ-тиҙ ашау. *Бер сеүәтә ҡатыҡты йыпырттым да урамға сығып йүгерҙем.* Ф. Иҫәнғолов.

**2.** *диал.* Һыпыртыу. *Рәис килеп сыкмаҫ элек .. үҙебеҙҙең өй ягына йыпырттым.* Н. Мусин.

**ЙЫПЫРЫУ** *к. һөйл.* Ҡомһоҙланып ашау, ҡалдырмай тиҙ-тиҙ ашап бөтөү; йыпыртыу. *Хужа ҡоштабаҡҡа тултырып ҡатыҡ йәнә туғыҙ икмәк алып килгән. Юлсы быларҙы ла йыпырған* (Әкиәттән).

**ЙЫПЫСЛАУ** *к. диал.* Кепесләү. *Күҙе йыпыслап тора.*

**ЙЫР** *и.* Көй менән башҡарыла торған шиғри әҫәр. *Моңло йыр. Шаян йыр. Халыҡ йыры. Йыр йырлау. Йыр күтәреү. Йыр сығарыу. Йырға ҡушылыу.* ▬ *Йырлағым да килеп йырламайым, йыр йырлаһам, әсем бушайҙыр* (Халыҡ йырынан). **Сәңгелдәк йыры** бала йоҡлатҡанда йырлай торған йыр. **Теләк йыры** кейәү йортона төшкән киленде ҡаршы ала торған нәсихәт йыры.

● *Йырҙың йыртығы юҡ.* Әйтем. *Моңһоҙҙоң да бер йыры була.* Әйтем.

**ЙЫРА** *и.* **1.** Оҙон соҡор; канау. *Ул йылды яҙ иртә килде. Йырғанаҡтар шарылдашып һыу ташыны. Соҡорҙар күлгә, йыралар йылғаға әйләнде.* К. Мәргән.

**2.** *ҡар.* **йырғанаҡ** 1.

**ЙЫРАҒАЙТЫУ** *к. ҡар.* **алыҫайтыу.**

**ЙЫРАҒАЙЫУ** *к. ҡар.* **алыҫайыу.**

**ЙЫРАҠ** *с. ҡар.* **алыҫ.**

**ЙЫРАҠА** *и.* Һыу йырған тәрән соҡор; йырғанаҡ.

● *Йыраҡаны һыу боҙор, яман арба юл боҙор.* Мәҡәл.

**ЙЫРАҠАЛАНЫУ** *к.* Йыраҡа рәүешенә килеү, йыраҡа рәүешендә булыу. *Йыраҡаланып төшөү.*

**ЙЫРАҠАЛАУ** *к.* Йыраҡа рәүешенә килтереү. *Йыраҡалап бөтөү.*

**ЙЫРАҠЛАШЫУ** *к. ҡар.* **алыҫлашыу.**

**ЙЫРАУ** *и. диал.* Йырсы. *Заманында йыр менән күп йыйындарҙа ҡатнашкан етмеш йәшәр йырау ҡарт Ҡәҙерғол .. һүҙгә кереште.* М. Иҙелбаев.

**ЙЫРАУСЫ** *и. диал.* Йырсы. *Юлдаш — һаман аҡ һаҡаллы таусың тау һелкетеп йырлар йыраусың.* С. Кулибай.

**ЙЫРҒАҠ** *и. ҡар.* **йырғанаҡ** 1.

**ЙЫРҒАҠЛАНЫУ** *к. ҡар.* **йыраҡаланыу.**

**ЙЫРҒАҠЛАУ** [1] *к. ҡар.* **йыраҡалау.**

**ЙЫРҒАҠЛАУ** [2] *к. ҡар.* **йырғыслау.**

**ЙЫРҒАНАҠ** *и.* **1.** Һыу йырған тәрән соҡор, йыраҡа. *Ауыл-ара юлдарҙағы йырғанаҡтар һыу менән тулғас, автомашиналар йөрөмәҫ булды.* И. Ғиззәтуллин. *Бер көндө Ғәзинур, .. ямғыр яуып үткәндән һуң, йырғанаҡта ҡағыҙ ҡарап йөҙҙөрөп уйнарға самалағайны.* Р. Ғабдрахманов.

**2.** *диал.* Гөрләүек.

**ЙЫРҒАНАҠЛАНЫУ** *к.* Йырғанаҡ барлыҡҡа килеү, йырғанаҡҡа әйләнеү. *Яҙын тауҙан ҡар, көҙөн ҡойма ямғыр һыуҙары ағып төшөп, тигеҙ ер йырғанаҡланып бөткән.*

**ЙЫРҒАНАҠЛАУ** *к.* Йырғанаҡҡа әйләндереү. *Тауҙарҙан шарлап ағып төшкән ҡар һыуҙары ерҙе нык йырғанаҡлаған.*

**ЙЫРҒЫС: ағас йырғыс** ағасты ҡабыҡ аҫтынан йырып йөрөй торған ҡорт.

**ЙЫРҒЫСЛАНЫУ** *к. төш. ҡар.* **йырғыслау.**

**ЙЫРҒЫСЛАУ** *к.* Төрлө бер ерҙән йырыу. *Ҡорт йырғыслаған ағас. Ер кибер-кипмәҫтән машиналар урамды йырғыслап бөтә.*

**ЙЫРҘА** *и.* Һыуҙың ерҙе уйып ағып киткән юлы. *[Йылғаның] ерҙе уйып ағып киткән юлы йырҙаһы йәки үҙәге тип атала.* Ә. Харисов. *За-*

*тон кышкылыкка суднолар индереп куйыу өсөн файҙаланыла торған Ағиҙелдең иҫке йырҙаһын тирәләп ята.* М. Хисмәтов.

**ЙЫРҘЫРЫУ** *к.* **1.** *йөкм. кар.* **йырыу.** *Йылға йырҙырыу.*

**2.** Ян-якка аралап, алға хәрәкәт иттереү. *Йырҙырып үтеү. Үлән йырҙырыу.* ■ *Курай еләклеген йырҙырып, Нуруллаңың аты куйы урманға инеп китте.* Ш. Янбаев.

**ЙЫРЛАНЫУ** *к. төш. кар.* **йырлау** 1. *Йырланған йыр.*

**ЙЫРЛАТЫУ** *к. йөкм. кар.* **йырлау** 1, 2. *Йыр йырлатыу.* ■ *Йырлаған һайын йырлағы килә ниңәлер. Әллә йырлата йәшлегем, әллә тыуған ер.* Х. Түләкәев.

**ЙЫРЛАУ** *к.* **1.** Тауыш ярылары ярҙамында моңло тауыш сығарыу, йыр башкарыу. *Йыр йырлау. Кара-каршы йырлау. Кушылып йырлау. Йырлап ишеттереү.* ■ *Йәш егеттәр гармун косаклап, урам буйлап йырлап үтәләр.* Ғ. Амантай. *Беҙ йырламай, дуҫтар, кем йырлаһын, нужа ғына күргәс йәштән үк* (Халык йырынан).

**2.** Моңло итеп тауыш биреү (кошка карата); һайрау. *Ике аккош ике якта күккә карап, бергәләп йырланы кағып канат.* Ш. Бабич.

**3.** *күсм.* Бер ыңғай, бер көй менән матур итеп шаулау. *Күл буйҙары — зифа камыш, шым ғына йырлап тора.* Р. Ниғмәти.

**4.** *күсм.* Шиғыр менән әйтеү. *Саф көмөштәй йырҙарымды йырламайым алтын өсөн. Йырлайым тик саф көмөштәй саф йөрәк халкым өсөн.* Ш. Бабич.

**Кеше йырын йырлау** кеше яйын яйлап, кеше һүҙен һөйләү.

● *Кем арбаһына ултырһаң, шуның йырын йырларһың.* Мәкәл.

**ЙЫРЛАШЫУ** *к. урт. кар.* **йырлау.** *Йырлашып ултырыу.* ■ *Яҙғы кистәрҙең берендә йыр йырлашалар кыҙҙар.* Ғ. Әмири.

**ЙЫРМАК** *и. кар.* **йыра.**

**ЙЫРМАКЛАНЫУ** *к. төш. кар.* **йырмаклау.**

**ЙЫРМАКЛАТЫУ** *к. йөкм. кар.* **йырмаклау.**

**ЙЫРМАКЛАУ** *к.* Теләһә нисек йырыу; йырғыслау, йырмалау. *Ерҙе йырмаклау.*

**ЙЫРМАЛАК** *и. диал.* **1.** Гөрләүек.

**2.** *кар.* **йырғанак** 1.

**ЙЫРМАЛАУ** *к. кар.* **йырмаклау.**

**ЙЫРМАС** *и.* **1.** Һыҙылып кына үткән сокор.

**2.** Өҫ кейеменең артында махсус калдырылған йырык. *Пинжәктең йырмасы. Пальтоның йырмасы.*

**ЙЫРМАСЛАНЫУ** *к. төш. кар.* **йырмаслау.** *[Фәхриҙең] йыйырсыктар менән йырмасланган киң бите яктырып китте.* Ф. Иҫәнғолов.

**ЙЫРМАСЛАУ** *к.* Теләһә нисек йырыу; йырғыслау. *Кар катыш ямғыр аҫтында күшегә--күшегә, .. атлыһы һука менән йырмаслап, күптәре көрәк менән каҙып үҙҙәренә тейгән ерҙәренә барлы-юклы орлоктарын һибеп сыктылар.* Ф. Иҫәнғолов. *Тубыктан ала кар йырмаслап текә тауға артылыу ... быуынды ала.* Н. Мусин.

**ЙЫР-МОҢ** *и. йыйн.* Йыр һәм моңло көй. *Халык йыр-моңдо бик ярата.*

**ЙЫРП-ЙЫРП** *окш.* Катырак йока нәмәнен төрлө якка капыл-капыл кағылғанда сыккан тауышты белдергән һүҙ. *Йырп-йырп итеү. Йырп-йырп килеү.*

**ЙЫРПЫЛДАУ** *к.* Йырп-йырп итеү, йырп--йырп килеү. *Карындык күҙле тәҙрәләр ишекте асып япканда бер эскә, бер тышка һуғылып, йырпылдап тора.* Һ. Дәүләтшина.

**ЙЫРПЫСЫК** *с. диал.* Кылансык.

**ЙЫРПЫСЫКЛАНЫУ** *к. диал.* Кылансыклапыу.

**ЙЫРСАЙ** *с. диал. кар.* **бысый** 2.

**ЙЫРСАЙЫУ** *к. диал.* Бысыйлау.

**ЙЫРСЫ** *и.* **1.** Йыр оҫтаһы. *Уралып яткан Уралда ... йырсынан йыр йырлатып, эсер сәйен һыуытып, бар донъяһын онотоп, йыйылып ултырыр карттар бар* (Кобайырҙан).

**2.** *с. мәғ.* Матур һайраусы (кошка карата). *Йондоҙҙар һәм ай — серле дуҫтарым, һандуғас, турғай — йырсы коштарым.* Ш. Бабич.

**ЙЫРСЫЛ** *с.* Йыр яратыусан, күп йырлаусан. *Уралыма дан йырлаған йырлап туймаҫ йырсыл карттар бар.* Р. Тойғонов.

**ЙЫРТАНАС** *с.* Кыланып, күҙен-башын уйнатып, осоп-төшөп тороусан (катын-кыҙға карата). *Күҙ уйнатып, ауыҙ йырып тороуын кара! Йыртанас!* С. Кулибай.

**ЙЫРТАНЛАК** *с. диал.* Кылансык.

**ЙЫРТАНЛАУ** *к. диал.* Кылансыклаңыу. *Был еңгәйгә ни булған, бигерәк йөрөй йыртанлап* (Туй йырынан).

**ЙЫРТКЫЛАНЫУ** *к. төш. кар.* **йырткылау.**

**ЙЫРТКЫЛАУ** *к.* Киҫәк-киҫәк итеп йыртыу. *Сәғиҙә яҙып ултырған көндәлеген йырткылап ташланы.* М. Тажи.

**ЙЫРТКЫС** *и.* **1.** Башка хайуандарҙы тотоп, итен ашап йәшәгән хайуан. *Йырткысты эҙәрлекләү.* // *Йырткыс йәнлек. Йырткыс януар.* ■ *Бүре заты хужалыкка бик ҙур зыян килтерә торған йырткыс.* С. Кулибай. *Кап-кара урманда йырткыстар олой.* Ш. Бабич. *Бер йырткыс кош капыл уларҙы [күгәрсендәрҙе] пыр туҙҙырып тибә башланы* ( Экиәттән). *Арыҫланды күреү менән батыр шашты, күҙҙәре уттай янып, асыуы ташты. Ысын батыр арыҫландан куркырмы, тип, акрын ғына был йырткыска якынлашты.* «Бабсак менән Күсәк».

**2.** *күсм.* Бик каты бәғерле, мәрхәмәтһеҙ кешегә карата әйтелә. — *Бар инде замана, ер ҙә, һыу ҙа [Хәйретдин] һинең кеүек йырткыстар кулында инде.* Б. Бикбай. *Йырткыс! .. Нисек уға һуғырға кулың күтәрелде?!* Ш. Шәһәр. // *[Катын:] .. Бына йырткыс кеше. Шаярып әйткәнде белмәй! Үлтерә яҙҙы!* Д. Юлтый.

**ЙЫРТКЫСЛАНЫУ** *к.* Йырткыс кеүек аяуһыҙланыу; канһыҙланыу. *Йырткысланып тукмарға керешә байбисә бала караусыны.* С. Әлибаев.

**ЙЫРТКЫСЛЫК** *и.* Сиктән, саманан тыш аяуһыҙлык, рәхимһеҙлек. *Тыңлаусыларҙың күҙ алдынан бынан ун өс-ун дүрт йылдар элек Соколов баярының күрһәткән йырткыслыктары .. бер-бер артлы үтте.* Б. Бикбай. *Дутовтың приказы шулай: «Кулығыҙға эләккән большевиктарҙы тотоғоҙ ҙа үлтерегеҙ!» ти. .. Дутов иҫ киткес йырткыслыктар эшләй.* З. Шаркы.

**ЙЫРТЛАС** *с.* Тәрән-тәрән булып соҡорланған. *Йыртлас шаҙра.*

**ЙЫРТТЫРЫУ** *к. йөкм. кар.* **йыртыу.** *Күлдәкте йырттырыу. Тәнде йырттырыу.*

**ЙЫРТЫҠ** *с.* **1.** Эләгеп, тартылып һ. б. сәбәп менән айырылған, тишекле булған. *Йыртыҡ бишмәт. Йыртыҡ итек. Йыртыҡ кейем. Йыртыҡ тун.* ■ *Урындыҡ өҫтөнә унан йыртыҡ, бынан тишек кейеҙ йәйелгән.* Ғ. Дәүләтшин. *Кешеләрҙең өҫ-баштары йыртыҡ.* Һ. Дәүләтшина.

**2.** *и. мәғ.* Йыртылған урын. *Ямал, ышанмаһағыҙ, мә күрегеҙ, тигән кеүек, итәгенең йыртығын аса биреп ҡуйҙы.* М. Тажи.

● *Йырҙың йыртығы юҡ.* Әйтем. *Йыртыҡ тишектән көлгән.* Мәҡәл.

**ЙЫРТЫҠАЙ** *с. диал.* Ҡыйпысыҡ.

**ЙЫРТЫҠАЙЛАНЫУ** *к. диал.* Ҡыйпысыҡланыу.

**ЙЫРТЫЛЫУ** *к.* **1.** *төш. кар.* **йыртыу 1.**

**2.** Эләгеп, тартылып һ. б. сәбәп менән айырылыу, тишекле булыу (йоҡа, йомшаҡ нәмәгә ҡарата). *Йыртылып бөтөү. Йыртылып китеү. Йыртылып сығыу.* ■ *Ямал ситәнгә эләгеп йыртылған күлдәк итәген ҡулы менән бөрә тотоп, әбейгә табан атланы.* М. Тажи. *Бер-бер артлы өҙләкһеҙ көсеп барған болоттар ҡапыл урталай йыртыла ла йәнә ҡушылалар.* Т. Хәйбуллин.

● *Ир үлде — итек йыртылды.* Мәҡәл. *Ҡуяндың тиреһе эт өргән һайын йыртыла.* Әйтем.

**ЙЫРТЫУ** *к.* **1.** Эләктереп, тартып айырыу, киҫәктәргә бүлеү, өҙөү (ҡағыҙ, туҡыма кеүек нәмәләрҙе). *Еңде йыртыу. Тартып йыртыу. Урталай йыртыу. Йыртып ташлау. Йыртып төшөрөү.* ■ *Магазин ҡайнай, акса һанайҙар, шытыр-шытыр ситса йырталар.* С. Агиш. *[Сәйҙел] яҙған ҡағыҙын йыртты һәм һүндерҙе утын бүлмәнең.* Ғ. Сәләм. *[Әбей] бер яулыҡ алып, яртыһын ҡыҙға йыртып бирҙе, ти* (Әкиәттән).

**2.** *күсм.* Ҡапыл һәм киҫкен рәүештә тынлыҡты, ҡараңғылыҡты һ. б. боҙоу (киҫкен тауыш, ныҡ яҡты һ. б. ҡарата). *Төн ҡараһын йыртып, ракета атылды.* Ә. Харисов.

**3.** Осло үткер нәмә менән йырып, эҙ һалыу, йырғыслау, ярыу. *Кисә генә арыҡ аты менән ер йыртҡан башҡорт крәҫтиәне бөгөн тракторлы коллективҡа килде.* Д. Юлтый.

● *Ҡоро ҡалаҡ ауыҙҙы йырта.* Мәҡәл.

**ЙЫРТЫШ**[1] *и. этн.* **1.** Кейәү кеше ҡыҙға ҡушылғанда йырта баҫып, бүләк өләшеп инеп китер өсөн ике яҡтан ишеккә арҡыры тотоп тора торған аршын самаһы тауар (йыртылған остары тотҡан ҡыҙҙарҙың үҙенә була). *[Ҡыҙҙар:] Әйҙә, еҙнә, кил әле, йыртыш йыртып уҙырға. Еҙнә, һиңә урын йәйҙек, бүләк биреп инергә.* Ҡ. Даян.

**2.** Төп ҡоҙағый туйҙа өләшә торған тар-тар ғына тауар йәки башҡа бүләк (өләшкәндә ҡоҙалар яғының еңгәләре, ҡыҙҙары таҡмаҡ әйтеп тора). *Еккән аттары ҡола. Йыртыш һорай тип көлмәгеҙ, борондан ҡалған йола* (Туй йырынан).

**ЙЫРТЫШ**[2] *с. диал.* Ҡыйпысыҡ.

**ЙЫРЫҠ** *с.* **1.** Йырылып торған, йырылған. *Йырыҡ итәк.*

**2.** *и. мәғ.* Йырылып торған урын.

◆ **Йырыҡ ауыҙ** *кар.* **ауыҙ.**

**ЙЫРЫЛЫУ** *к. төш. кар.* **йырыу 1—3.** *Итәге йырылған күлдәк.* ■ *Яҙғы ташҡында быуа йырылған.* Ф. Иҫәнғолов.

**ЙЫРЫН** *и.* **1.** Һыу йырған соҡор. *Ауылды ҡап уртаға ярып үткән йырын башында алабута, әрем араһынан саҡ күренеп ултырған бәләкәй бер өй генә йоҡламай.* З. Биишева.

**2.** *диал.* Гөрләүек.

**ЙЫРЫНДЫ** *и. кар.* **йырғанаҡ 1.**

**ЙЫРЫНЫУ** *к.* Берәй эш йәки хәлдән йырып сығыу, нисек тә ҡотолоу; арыныу. *Өфөләге улым күпме ҡунаҡҡа саҡырҙы, донъя мәшәкәтенән йырынып китеп булмай.* Р. Низамов. *Мин был хәүефле уйҙарҙан йырынырға тырыша инем.* Ә. Вәли.

**ЙЫРЫУ** *к.* **1.** Ниҙелер өңөп, ашап, юл ярыу. *Тауҙарҙы йырып, Ҡураған йылғаһы аға.* К. Мәргән. / Эркелеп, быуылып ятҡан нәмәгә юл ярыу. *Быуаны йырыу.* ■ *Балалар йылға йыра, ағымын кире бора.* Ф. Рәхимғолова.

**2.** Кимереп, өңөп, юлаҡ яһау. *[Һандыҡтың] таҡталарын ҡорт йырып бөткән.* З. Биишева.

**3.** Буйға ярыу, телеү. *Һаҙаҡ Аҡһаҡ ҡоланың һыртын ярып, бер ҡолағын йырып барып сыға.* «Аҡһаҡ ҡола».

**4.** Ниҙелер ян-яҡҡа аралап, алға хәрәкәт итеү. *Батҡаҡ йырыу. Көрт йырып барыу.* ■ *Зөһрә ысыҡлы һаҙ үләнен йырып, тар ғына һуҡмаҡтан бара.* З. Хисмәтуллин. / Ҡаршылыҡты еңеп, алға хәрәкәт итеү. *Беҙҙең танкылар алға йырып үтте.* С. Кулибай. *Полковник Зенченко һәм бер нисә офицер килде. Халыҡты йырып, демонстранттар араһына инергә теләнеләр. Ләкин уларҙы индермәнеләр.* Д. Юлтый.

◆ **Ауыҙ йырыу** *кар.* **ауыҙ. Йырып алғыһыҙ** мыжғып торған күп. *Йырып алғыһыҙ күп булыу.*

**ЙЫТЫҠА** *с.* Останлап, һүҙ ташып йөрөүсән (ҡатынға ҡарата).

**ЙЫУА** *и. бот.* Һуғанбаш үҫемлектәр төркөмөнә ингән, кеше ашай торған әсе ҡыяҡ япраҡлы үләндәрҙең дөйөм исеме. **Айыу** (*йәки* **ат, йүкә**) **йыуаһы** *кар.* **оҫҡон йыуаһы. Күл йыуаһы** һыулы һаҙлыҡ ерҙә үҫә торған йомшаҡ сөсө йыуа. **Ҡалмыҡ йыуаһы** ашағанда лайлаланып тора торған яҫы ҡыяҡлы йыуа (ҡалҡыу ерҙә үҫә). **Ҡырсын йыуаһы** ҡырсында үҫә торған ҡара йәшел төҫтәге, йомро ҡыяҡлы, ваҡ сөсө йыуа. **Ҡыуыш йыуа** әсе ҡыуыш йомро ҡыяҡлы сөскөлт йыуа. **Оҫҡон йыуаһы** тау битләүҙәрендә үҫә торған һабаҡлы эре йыуа. **Сәүкә йыуаһы** өйкөм-өйкөм булып, ҡая араһында үҫә торған һыңар яҫы ҡыяҡлы сөсө йыуа. **Талғыр йыуа** ҡалҡыуҙа үҫә торған һыҙат-һыҙат ҡыяҡлы әсе йыуа. **Тау йыуаһы** *кар.* **оҫҡон йыуаһы. Һаҙ йыуаһы** *кар.* **күл йыуаһы.**

**ЙЫУАН** *с.* **1.** Әйләнәһе ҙур (оҙонса, йомро нәмәнең арҡырыһына ҡарата); *киреһе* нәҙек. *Йыуан ағас. Йыуан бүрәнә. Йыуан таяҡ. Йыуан түмәр.*

**2.** Кәүҙәгә ҡалын; һимеҙ, таҙа. *Йыуан кеше. Йыуан ҡорһаҡлы кеше.* ■ *Ҡалын атҡарыу өсөн бер йыуан ат һуйғандар.* М. Буранғолов.

◆ **Төптән йыуан сыҡҡан** эре һөйәкле, ҡыҫҡа буйлы, ныҡлы кешегә әйтелә.

● *Ит ашағандың балтыры йыуан.* Мәҡәл.

**ЙЫУАНАЙТЫЛЫУ** *ҡ. төш. ҡар.* **йыуанайтыу.**

**ЙЫУАНАЙТЫУ** *ҡ.* Йыуанға әйләндереү.

**ЙЫУАНАЙЫУ** *ҡ.* Йыуанға әйләнеү. *Ағас йыуанайған.* ■ *Күл өҫтөнән болотҡа олғашҡан бағана кеүек ҡара нәмә үҫеп сыҡты. Бер оҙонайа, бер ҡыҫҡара, бер йыуанайа, бер нәҙегәйә ине ул «бағана».* Д. Бураҡаев.

**ЙЫУАНДЫРЫУ** *ҡ.* Ауыр, күңелһеҙ хәлдәге кешелә өмөт, ышаныс уятыу. *Йыр менән йыуандырыу. Күңелде йыуандырыу.*

**ЙЫУАНЛЫҠ** *и.* **1.** Оҙонса, йомро нәмәнең арҡыры киҫелеш ҙурлығы; *киреһе* нәҙеклек. *Беләк йыуанлығы ағас. Бүрәнәнең йыуанлығын үлсәү.* ■ *[Әсәһе — Сабираға:] Ошо йөндән һиңә ойоҡ бәйләр өсөн тегәр еп йыуанлығы иттереп, нәҙек кенә итеп иләйем әле.* Ғ. Хәйри. *Аяҡтар ҡум-ҡум булған, күк тамырҙар бармаҡ йыуанлығы булып ҡалҡҡан.* Д. Юлтый.

**2.** Кәүҙәгә ҡалын, йыуан булыу сифаты. *[Ҡатын:] — Минең йыуанлыҡта һеҙҙең эшегеҙ булмаһын!* К. Мәргән.

**ЙЫУАНТЫҠ** *с.* Уртаса йыуан һәм ҡыҫҡа. *Айбулатҡа ҡарағанда байтаҡ төпөш, урта буйлы, йыуантыҡ Асатай ат өҫтөндә лә дүрткел кеүек булып күренә.* Һ. Дәүләтшина. *[Ибраһим ағайҙа] ҡыҫҡараҡ йыуантыҡ бармаҡтар, .. ысын игенсе ҡулдары.* Д. Исламов. *Бында [Дим буйында] ҡыуаҡ-ҡыуаҡ талдар, йыуантыҡ ҡара ҡуҫҡыл еректәр үҫә.* Б. Бикташев.

**ЙЫУАНЫС** *и.* **1.** Күңелде әүрәткән, йыуандырған тойғо. *Йыуаныс алыу. Йыуаныс биреү. Йыуаныс табыу.* ■ *Һөрмәле керпектәрең ни өсөн күңел йыуанысы өсөн генә бер тапҡыр күтәрелмәй, һылыуым?!* Т. Йәнәби.

**2.** Күңелде йыуандыра, шатландыра торған кеше йәки нәмә. *[Фатима:] Бала бер йыуаныс бит ул. Әле бына, Гөлдәр килгәс, өйөм дүртмөйөшләнеп киткәндәй булды.* Б. Бикбай. *Унда [тауҙа] беҙҙең өсөн бер нисә төрлө йыуаныс бар ине. Ҡош ояларьы, йомран өңдәре ҡараныҡ.* Ғ. Ибраһимов. *Ҡотло булһын тартҡаның, шул ысын йыуаныс гармуның.* Ш. Бабич.

**ЙЫУАНЫСЛЫ** *с.* Йыуаныс биргән. *Йыуаныслы хәбәр.*

**ЙЫУАНЫУ** *ҡ.* Ауыр, күңелһеҙ хәлдә өмөт, ҡыуаныс табып, үҙеңде әүрәтеү. *[Фәтхи] яҙ ҡайтып иген сәсеү, ат, һыйыр алыу .. өмөттәре менән йыуана.* А. Таһиров. *Мин йырымда түйгансаға тиклем һине һөйөп, тирбәп йыуандым.* Х. Ҡунаҡбай.

**ЙЫУАСА** *и.* **1.** Сөсө ҡамырҙан йәйеп, ваҡ итеп ҡырҡҡылап, майға ҡайнатып бешергән ашамлыҡ. / Ҡунаҡҡа йәки туйға күстәнәс итеп алып барылған шул ашамлыҡ. *Килен, ағаларына ҡунаҡҡа барам тип көн дә йыуаса бешерә* (Әкиәттән). *Беҙҙең ҡоҙа хәлле икән, йыуасаһы баллы икән* (Туй йырынан). **Йыуаса йыры** туйҙа ҡоҙа-ҡоҙалар күстәнәс күтәреп бейегәндә йырланған шаян йыр.

**2.** *диал.* Күстәнәс. *Ул [Сөнәгәт] заводтан ҡайтҡанда, еҙнәһенә гел йыуаса алып ҡайта. Апаһына ла яулыҡ, күлдәклек һымаҡ бер нәмә тоттора.* Ж. Кейекбаев.

◆ **Иләк йыуасаһы** *диал. ҡар.* **бауырһаҡ**[1]. **Йыуаса кеүек** ныҡлы, батыр. *Йыуаса ла кеүек батыр ирҙәр беҙҙән киткән инде, юҡ улар* (Халыҡ йырынан).

**ЙЫУАСАЛАУ** *ҡ.* Йыуаса ҡушыу. *Йыуасалап сәй эсеү.*

**ЙЫУАТА** *и.* Нәҫел-ырыуҙың төп тамыры, заты; йоҡан. **Йыуатаң ҡороғор** ҡарғағанда әйтелә.

**ЙЫУАТҠЫС** *и.* Йыуаныс биргән кеше йәки нәмә. *Һин [китап] йыуатҡыс, һин уятҡыс, һин минең ысын атам.* Ш. Бабич. *Юҡ тиһәң дә барҙыр әле күңел йыуатҡыстарың* (Халыҡ йырынан).

**ЙЫУАТЫУ** *ҡ.* Ауыр, күңелһеҙ хәлдә һүҙ менән әүрәтеп, тынысландырыу.— *Тупрағы ситкә яҙғас, бер хәл дә итеп булмай шул,— тип Фаҡиһа ҡоҙағыйын йыуата.* Ж. Кейекбаев. *Изге теләктә бул. Тик һин мине вәғәҙәләр менән йыуатма.* М. Кәрим. / Онотолдороп, яҡты тойғо уятып, тынысландырыу. *Күңелде йыуатыу.* ■ *Йыуаталар мине йырҙар.* Ф. Рәхимғолова. *Ҡурай тартып үҙен ул йыуата* (Халыҡ йырынан).

**ЙЫУАШ** *с.* Йомшаҡ, баҫынҡы, баҫымсаҡ тәбиғәтле; *киреһе* уҫал. *Йыуаш кеше. Йыуаш тәбиғәтле малай. // Йыуаш күренеү. Йыуаш ҡына ҡарау.* ■ *[Көсөк] үҙе бик йыуаш, ҡош-ҡортҡа теймәй, хатта вау-вау тип өрә лә белмәй.* А. Игебаев. *[Кухарка:] Ниңә һеҙ бөгөн йыуаш ҡына ултыраһығыҙ?* Д. Юлтый.

● *Йыуаштан йыуан сыҡҡан.* Мәҡәл.

**ЙЫУАШАЙТЫУ** *ҡ.* Йыуашҡа әйләндереү, йыуаш итеү. *Кешене йыуашайтыу.* ■ *Рәхимә тауышын йыуашайтты.* Һ. Дәүләтшина.

**ЙЫУАШАЙЫУ** *ҡ.* Йомшаҡ, баҫымсаҡ тәбиғәтлегә әйләнеү, йыуашҡа әйләнеү. *Был юлы кешеләр йыуашайып ҡалғандай күренә ине инде, һуҡраныуҙар ҙа ишетелмәй.* Д. Юлтый. — *Мин һине ашҡа саҡыра килдем! — тине, ти, Бесәй. Бүре йыуашая төшөп, бесәй янына килде, ти* (Әкиәттән).

**ЙЫУАШЛАНДЫРЫУ** *ҡ. ҡар.* **йыуашайтыу.**

**ЙЫУАШЛАНЫУ** *ҡ. ҡар.* **йыуашайыу.**

**ЙЫУАШЫТЫУ** *ҡ. ҡар.* **йыуашайтыу.**

**ЙЫУАШЫУ** *ҡ. ҡар.* **йыуашайыу.**

**ЙЫУҒЫР** *с. диал.* Йыума. *Йыуғыр ҡатын.*

**ЙЫУҒЫС** *и.* **1.** Ниҙелер ышҡып йыуыу өсөн махсус тотолған йомшаҡ нәмә. *Сепрәк йыуғыс. Йүкә йыуғыс. Иҙән йыуғысы. Мунса йыуғысы.* ■ *Картуф бешкән арала йыуғыс алып иҙәнде лә йыуа һалдым.* К. Кинйәбулатова.

**2.** *кусм.* Өнһеҙ, һүҙһеҙ хеҙмәт иткән хаҡһыҙ ялсы.— *Һиңә йыуғыс булырға килгәнем юҡ. .. Ана, урының һал да ят.* Т. Хәйбуллин.

◆ **Ҡыл йыуғыс** бик юха, хәйләкәр кешегә ҡарата әйтелә.

**ЙЫУҒЫСЛАНЫУ** *ҡ.* Әрһеҙләнеп, туҙып, йыуғыс кеүек булыу. *Бау йыуғысланып бөткән.*

**ЙЫУҒЫСЛАУ** *ҡ.* Йыуғыс менән ышҡыу. *Йыуғыслап йыуыныу.* ■ *Гөлбаҙыян инәй һыу йылыта һалды. .. Йыуылмай ултырған килеһен йыуғыслап, ҡырып йыуа башланы.* Ғ. Шәрипов.

**ЙЫУҘЫРТЫУ** *к. йөкм. кар.* **йыуыу** 1, 2, 6. *[Гөлйөҙөм:] Өсөнсө көн генә йыуған керемде Ғәзимә .. тотош ҡабаттан йыуҙыртты.* Һ. Дәүләтшина.

**ЙЫУҘЫРЫУ** *к.* **1.** *йөкм. кар.* **йыуыу** 1, 2, 6. *Иҙән йыуҙырыу.* ■ *Буранбай күлдәк-ыштан йыуҙырып ала торған урын тапҡан ине.* Д. Юлтый.

**2.** Көслө һыу баҫымы йәки ағымы менән йыуыу. *Машинаны йыуҙырыу. Урам ташын йыуҙырыу.*

♦ **Эсәк йыуҙырыу** файҙаһыҙға сәй, һыу эсеү.

**ЙЫУМА** *с.* Һөҙ менән күңелде арбаусан. *Йыума кеше.*

● *Йыума тел ташты иретә.* Әйтем.

**ЙЫУЫЛЫУ** *к. төш. кар.* **йыуыу.** *Йыуылған иҙән. Йыуылған кер.* ■ *Иҙел, Иҙел! Аҙмы һыуҙар ташҡан, аҙмы таштар йыуылып шымарған.* Ғ. Сәләм.

**ЙЫУЫН** *и.* Һыйырҙың һигеҙгүҙ өҫтө (быҙаулар алдынан йомшап, соҡорланып төшә). *Һыйыр йыуыныи йомшатҡан.*

**ЙЫУЫНҒЫС** *и.* Йыуына торған элеп ҡуймалы һауыт. *Мөйөштә йыуынғыс, уның өҫтөнә һабын ҡуйылған.* А. Таһиров.

**ЙЫУЫНДЫ** *и.* Берәй нәмәне йыуған бысраҡ һыу. *Йыуындыны түгеү. // Йыуынды һыу.* ■ *Иҙән уртаһында йыуынды һыу тулы тас тора.* Д. Юлтый.

**ЙЫУЫНДЫҠ** *и. кар.* **йыуынды.**

**ЙЫУЫНДЫРЫУ** *к.* Кешенең битен, ҡулын йәки тотош тәнен йыуыу. *Баланы йыуындырыу.* ■ *[Рәхимә:] Йәш килен, бынау ҡара сурнайыңды йыуындырып, өҫтөнә берәй арыу нәмә табып кейҙереп ебәр!* Һ. Дәүләтшина.

**ЙЫУЫНСА** *и. диал. кар.* **йыуғыс** 1.

**ЙЫУЫНЫУ** *к.* Бит, ҡулыңды йәки тотош тәнеңде йыуыу. *[Муйылбикә:] Йә, килендәр, ҡыҙҙар, йыуыныгыҙ, тамаҡланып алайыҡ.* Һ. Дәүләтшина. *Ваннаға, душҡа ҡарағанда, мунсала йыуыныу һәйбәтерәк.* В. Ғүмәров.

**ЙЫУЫУ** *к.* **1.** Һыу йәки бүтән шыйыҡлыҡ менән бысраҡтан таҙартыу. *Башты йыуыу. Битте йыуыу. Кер йыуыу. Ҡулды йыуыу. Өй йыуыу. Өҫ-башты йыуыу. Ҡайнатып йыуыу. Һабынлап йыуыу. Йыуған күлдәк.* ■ *Иҙән һап-һары итеп ҡырып йыуылған.* Я. Хамматов. *Бер көн иртәнсәк детсадта, әҙерләп йылы һыуҙы, апаһынан һорап алып, Зәйнәп сынаяҡ йыуҙы.* Ғ. Амантай.

**2.** Һыу менән таштан, ҡомдан айырыу (алтынды). *Алтын йыуыу.* ■ *Өмөтбай иртә менән китеп, руда әҙерләй ҙә, төштән һуң Ҡарасәс менән уны барып йыуа.* Ғ. Дәүләтшин.

**3.** Ағып, тейеп сылатыу. *Йылы күҙ йәштәре Бәҙиғолдоң битен йыуа.* Т. Хәйбуллин.

**4.** Яр ситенән ҡуҙғатып ағыҙыу. *[Бураншa:] Мин Ғилман ағайҙы барып алып киләйем, .. тулҡын йыуып алып китер.* З. Биишева. / Өңөп емереү; ашау. *Һыу ярҙы йыуа.*

**5.** *күсм.* Кешенең күңелен арбап иретеү; юхалау. *Ят ағаһын еҫкәгәнсә, үҙ кешең булыр, ят итмәҫ, тигән булып таҫма телдәре менән йыуҙы.* Һ. Дәүләтшина.

**6.** *күсм. һөйл.* Ниҙелер ҡотлап эскелек һыйы ойоштороу, берәй ваҡиғаны эскелек менән билдәләү. *Хужалыҡҡа берәй нәмә һатып алына. Һис булмаһа, кемгә булһа ла яңы кейем тегелә. Бындай нәмәләрҙе [Әпсәләмовтар] бер ваҡытта ла йыумай ҡалдырмайҙар.* А. Карнай.

♦ **Бите(н) йыумаған** *кар.* **бит** [1]. **Сеүәтә йыуыу** күҙҙе йәшкәҙәтеп шым ғына илау. *[Бисәләрҙең] ҡайһы берҙәре, йәш саҡтары иҫенә төшөп, .. сеүәтәләрен йыуып ала.* Ғ. Дәүләтшин.

● *Ҡул ҡулды йыуа, ике ҡул битте йыуа.* Мәҡәл.

**ЙЫУЫШЫУ** *к.* **1.** *урт. ярҙамл. кар.* **йыуыу** 1, 2.

**2.** *диал.* Йыуыныу.

**ЙЫФЫУ** *к. диал.* Йыпырыу. *Ул [Ғариф] балғалаҡ алды ла ҡурған йомортҡаны йыфырға тотондо.* Н. Мусин.

**ЙЫҺАЗ** [*гәр.*] *и.* **1.** (*йәки* **өй йыһазы**) Өй эсендәге бөтә булған кәрәк-яраҡ нәмә. *Йыһазлы өй.* ■ *Ыласынбайҙың өйөндә йыһаз күренмәй ине. Һикегә йәйелгән кейеҙҙе иҫәпләмәгәндә, унда бер нәмә лә юҡ.* Ғ. Ғүмәр.

**2.** Билдәле эш өсөн кәрәк булған ҡорал-ҡорамал. *Фермаға яңы механизация йыһаздары ҡуйыу.*

**ЙЫҺАЗЛАНДЫРЫЛЫУ** *к. төш. кар.* **йыһазландырыу.** *Завод .. бик камил ҡорамалдар менән йыһазландырылған.* ■ *Яҡшы йыһазландырылған бүлмә; карауат, яҙыу өҫтәле, телефон.* Н. Иҙелбай.

**ЙЫҺАЗЛАНДЫРЫУ** *к.* **1.** Йыһаз (1 мәғ.) менән тәьмин итеү, йыһазлы итеү; йыһазлау. *Квартираны йыһазландырыу.*

**2.** Эш өсөн кәрәкле ҡорал-ҡорамалдар алып урынлаштырыу, йыһазлау. *Мәктәп кабинетын йыһазландырыу.*

**ЙЫҺАЗЛАУ** *к. кар.* **йыһазландырыу.**

**ЙЫҺАН** [*фарс.*] *и.* **1.** Ҡояш, йондоҙҙарҙы эсенә алған бөтә донъя, ғаләм. *Йыһан арауығы.*

**2.** Бөтә ер йөҙө. *Күп илдәрҙә йөрөнөм, йыһан гиҙҙем, үҙ илемдәй илдәр тапманым* (Халыҡ йырынан).

**3.** *күсм. һөйл.* Ниҙеңдер сикһеҙ, иҫәпһеҙ күп һаны. *Күҙ асып йомғансы, йыһан гәскәр йыйылған.* «Ҡаһым түрә».

**ЙЫҺАННАМА** [*фарс.*] *и.*, **йыһаннама китабы** Бөтә йыһан тураһында төрлө мәғлүмәт биргән боронғо китап.

**ЙЫҺАТ** [*гәр.*] *и. иҫк.* **1.** Изге һуғыш. *Алға табан барырға ҡылғыл йыһат.* М. Ғафури.

**2.** (*баш хәреф менән*) Ир-ат исеме.

**ЙЫШ** *с.* **1.** Бер-беренә яҡын урынлашҡан бер төрлө нәмәләрҙән йәки өлөштәрҙән торған. *Йыш тараҡ. Йыш текмә. // Йыш сәселгән иген.* ■ *[Тауҙытауғаһуғар:] Бынау ерҙә тау бик йыш ултырған, ә тегендә һирәк булған. Шуларҙы тигеҙләп ултыртып йөрөйөм* (Әкиәттән).

**2.** Бер төрлө хәрәкәттәрҙең, тауыштарҙың һ. б. тиҙ алмашыныуынан торған. *Йыш пульс. Йыш һулыш. // Пульсы йыш тибә. Йыш һулау.*

**3.** Ҡыҫҡа ваҡыт һайын ҡабатланып, булып торған. *Йыш осрашыу ойоштороу. // Йыш барыу. Йыш күреү. Йыш ҡайтыу.* ■ *Ҡалала .. байрамдар йыш була.* С. Агиш. *Мәктәптә сак-*

*та ҡыҙҙар ятағына йыш инеп уйнай торғайныҡ.* С. Агиш.

**ЙЫШАЙТЫУ** *ҡ.* **1.** Бер төрлө нәмәләрҙең йәки өлөштәрҙең урынлашыу араларын кәметеү, тығыҙлау. *Өҫтәлдәрҙе йышайтып ултыртыу.*

**2.** Бер төрлө хәрәкәттәрҙең, тауыштарҙың һ. б. алмашыныу ваҡытын кәметеү; йыш-йыш итеү. *Һулышты йышайтыу.*

**3.** Ҡабатланып, булып торған ваҡыт араһын кәметеү. *Улар [боландар] тәүҙә әкрен генә атлап ситкәрәк тайшанды, унан аҙымдарын йышайтты ла күҙ асып йомғансы урман ҡырлатып елеп китеп барҙы.* С. Кулибай.

**ЙЫШАЙЫУ** *ҡ.* **1.** Бер төрлө нәмәләрҙең йәки бер нәмә өлөштәренең урынлашыу аралары кәмеү; тығыҙланыу. *Урман йышайҙы.*

**2.** Бер төрлө хәрәкәттәрҙең, тауыштарҙың һ. б. алмашыныу ваҡыты кәмеү; йыш ҡабатланыу. *Йөрәк тибеше йышайҙы.* ■ *— Бына хәҙер уның [ауырыуҙың] пульсы ниндәй йышайҙы, кискә көт тә тор, температураһы тағы утыҙ туғыҙға һикерәсәк.* Һ. Дәүләтшина.

**3.** Ҡабатланып, булып торған күренештәрҙең ваҡыт араһы кәмеү; тиҙ-тиҙ ҡабатланыу. *Беҙҙән артҡа уҙып төшкән снарядтар йышайҙы.* Д. Юлтый. *Ғаиләнең асығыуы йышайғандан-йышая барҙы.* Х. Мохтар.

**ЙЫШ-ЙЫЛТЫРАҠ** *и. йыйн. кар.* **йылтыр-йышыр.**

**ЙЫШҠЫ** *и.* Ағастан булған нәмәләрҙең өҫтөн юнып шымарта торған ҡорал. *Юныҫҡылар йышҡы эсенән бөгәрләнеп сыға ла ергә төшә.* А. Карнай. **Йомро йышҡы** буйҙан-буй улаҡлап юныу өсөн ҡулланылған йышҡы. **Ҡул йышҡыһы** шымартыу өсөн генә ҡулланылған ҡыҫҡа йышҡы. **Оҙон йышҡы** шымартҡанды тағы төҙәйтер өсөн ҡулланылған йышҡы. **Тырнаҡ йышҡы** умарта, ялғаш һымаҡ түңәрәк нәмәнең эсен шымарта торған йышҡы.

**ЙЫШҠЫЛАУ** *ҡ. кар.* йышыу. *Бүрәнәне йышҡылау.*

**ЙЫШҠЫН** *с. диал. кар.* **шыр** [1] 1. *Йышҡын туғай.*

**ЙЫШЛАНЫУ** *ҡ. төш. кар.* **йышлау** 1. *Йышланған иҙән.*

**ЙЫШЛАТЫУ** *ҡ. йөкм. кар.* **йышлау** 1, 2. *Иҙәнде йышлатыу.*

**ЙЫШЛАУ** *ҡ.* **1.** Бер-беренә яҡын килтереү, араларын яҡын итеү. *Иҙән таҡталарын йышлау.*

**2.** Ҡайҙалыр йыш-йыш йөрөү, йыш-йыш барыу. *[Әсәһе:] — Күсәрбай беҙҙең тирәгә хәҙер йышланы. Нисә ҡарама, ҡыҙым эргәһендә.* Д. Исламов. *Район ер бүлегендә зоотехник булып эшләгәнлектән, Наилә уларҙың колхозына һирәк-һаяҡ булһа ла килгеләй торғайны. Ә инде былтыр, һуғыш башланғас, йышлай башланы.* Ғ. Ибраһимов.

**3.** *кар.* **йышайтыу** 3.

**ЙЫШЫЛЫУ** *ҡ.* **1.** *төш. кар.* **йышыу.** *Йышылған таҡта. Йышылған тас.*

**2.** Күп тотоноуҙан шымарып, ялтырау. *Йышылып бөткән таяҡ.* ■ *[Үмәр] башындағы ҡайыш һымаҡ йышылып бөткән ҡара таҡыяһын алып, тирләгән саңлы битен, елкәләрен һыпырҙы.* Һ. Дәүләтшина.

**3.** *күсм.* Күпте күреп, төрлө эшкә, хәйләгә оҫтарыу; шымарыу. *[Апайым:] [Фәниә] һинән өлкән, йышылған ҡыҙ. .. Үҙеңә тиң ҡыҙҙар бөткәнме ни?* Ф. Иҫәнғолов.

**ЙЫШЫУ** *ҡ.* **1.** Ағас нәмәләрҙең өҫтөн юнып шымартыу. *Таҡта йышыу. Йышып тигеҙләү.* ■ *Улар [Ирек менән Толя] ағасты оҙон көйө йыша, шунан фуганка менән тигеҙләй, закрой алалар.* Ғ. Шәрипов.

**2.** Ҡом, көл кеүек онтаҡ нәмә менән ышҡып йылтыратыу; ағартыу. *Самауыр йышыу.* ■ *Йышып ағартылған еҙ тас, еҙ комған тотоп, Байрас .. ҡунаҡтарҙың ҡулын йыуҙырып сыҡты.* З. Биишева.

**ЙӘ** [1] [*фарс.*] *терк.* **1.** *бул.* Яңғыҙ йәки ҡабатланып килеп, мәғәнә яғынан берен бере алмаштырған һөйләм һәм һөйләм киҫәктәрен сағыштырыу өсөн ҡулланыла. *Һөйләүсе йәки йырауҫы үҙенең отоп алған йырына йә экиәтенә яңы һүҙҙәр ҡушып, арттырып һөйләй.* Ғ. Амантай. *Радио беҙҙең бүлмәлә ҡысҡырып һөйләп тора, йә Мәскәүҙән, йә Өфөнән музыка гөрләп тора.* Р. Ниғмәти. / Ҡабатланып килеп, мәғәнә яғынан берен бере инҡар иткән һөйләм һәм һөйләм киҫәктәрен сағыштырыу өсөн ҡулланыла. *[Айбулат:] Хәҙергә көндә йә беҙ, йә улар.* Һ. Дәүләтшина. *[Ҡыҙ:] Иртәгә йә һинең башың бөтә, йә мин һинең ҡатының булам* (Әкиәттән). **Йә булмаһа** мәғәнә яғынан берен бере алмаштырған һөйләм һәм һөйләм киҫәктәрен сағыштырыу өсөн ҡулланыла. *Ул беҙҙең сәстән һыйпай, йә булмаһа арҡанан һөйә торғайны.* С. Агиш.

**2.** Ниндәйҙер фаразды белдереү өсөн ҡулланыла. *[Сәлмән:] Быларға ышанһаң, йә ултыртҡан картуфты суплән бөтөрҙәр* (Әкиәттән).

**3.** *көс.* Ниндәйҙер үкенесте белдереү өсөн ҡулланыла. *Ҡарап барыр инек, йә, исмаһам, ут күренмәй алғы ҡаланан.* Ғ. Сәләм.

**ЙӘ** [2] *киҫ.* **1.** Йомошто йәки һүҙҙе тыңлап, үтәргә ризалыҡ белдергәндә әйтелә; ярар.— *Бар, ҡыҙым, һыуға барып кил.— Йә.— Иплән кенә йөрө.— Йә.*

**2.** Ҡеүәтләү, әйҙәләү, өндәүҙе белдергәндә әйтелә; әйҙә. *[Сынбулатов:] Йә, һөйлә, Хафиз ағай, тик ҡыҫҡараҡ тот.* М. Тажи. / Һүҙгә, яуапҡа ыңғайлатып, һорау биргәндә әйтелә; шунан. *— Йә, ни хәл? — Шул, бер көйө.* С. Агиш.— *Йә, улым, һин ниндәй төш күрҙең?* (Әкиәттән). / Мөрәжәғәткә ҡаршы өндәшкәндә әйтелә. — *Сәлмән! — Йә!*

**3.** Киҫәтеү, сикләүҙе белдергәндә әйтелә; етәр. *— Йә, күп сыуылдашмағыҙ.* Һ. Дәүләтшина. / Һығымталағанда, эште йәки һүҙҙе тамамлағанды белдергәндә әйтелә; ярар. *— Йә, улайһа, бәгрем, хуш инде.* Ғ. Амантай.

**ЙӘ** [3] *ымл.* Ҡәнәғәтһеҙлек белдергәндә әйтелә. *Һис тыңламай бит, йә.* ■ *Йә, ошо кешегә Юламан карт ҡалайтып ышанһын!* З. Биишева.

**ЙӘБЕР** [*ғәр.*] *и.* Физик йәки рухи ғазап, яфа. *Ауыл артынан ауыл, волость артынан волость йәбергә, золомға ҡаршы күтәрелә.* Һ. Дәүләтшина. *Батырша үҙенең хитапнамаһында башҡорттарҙың күргән һәммә золом һәм йәберҙәрен һанап сыға.* Ғ. Фәхретдинов. *Сөйәлбай бер ваҡытта ла уғай әсәнән йылы һүҙ ишетмәгән,*

*якты сырай күрмәгән, башы йәберҙән сыкмаған* (Әкиәттән).

□ **Йәбер итеү** (*йәки* **кылыу**) физик йәки рухи ғазап, яфа сиктереү; йәберләү. *Тиҙ үлһәм дә, шуға саклы бир һин сабыр, кылдылар кәрҙәштәрем беҙгә йәбер.* М. Ғафури.

**ЙӘБЕР-ЗОЛМӘТ** *и. йыйн. кар.* **йәбер-золом.**

**ЙӘБЕР-ЗОЛОМ** *и. йыйн.* Төрлө йәбер һәм золом; йәбер-золмәт. *Түрәнең тамағы туйманы, йәбер-золомон куйманы, меңәрләп малды кыуҙылар, йөҙәрләп йәнде кыйҙылар.* Салауат Юлаев.

**ЙӘБЕРЛЕК** *и.* Йәберҙән килгән кыйынлык; ыҙа. *Йәберлек кисереү.*

**ЙӘБЕРЛӘНЕҮ** *к.* **1.** Йәбер күреү, йәбер кисереү. *Йәберләнгән ярлы халкым өсөн мең йәнемде корбан итермен.* Т. Йәнәби.

**2.** *диал. кар.* **рәнйәү** [1].

**ЙӘБЕРЛӘТЕҮ** *к. йөкм. кар.* **йәберләү.**

**ЙӘБЕРЛӘҮ** *к.* Йәбер күрһәтеү, йәбер сиктереү; йәбер итеү. *[Салауат:] Әсирҙәргә теймәгеҙ! Һуғыштан һуң әҙәм йәберләү — хурлык.* М. Кәрим. *Үгәй әсәнең өйгә аяк баҫыуы була — теге кыҙҙы йәберләй ҙә башлай* (Әкиәттән).

**ЙӘБЕРСӘК** *и. диал. кар.* **йәрпесәк** [1].

**ЙӘБЕРҺЕНЕҮ** *к.* Йәбер итеп күреү, йәбергә һанау; рәнйеү. *Ямал ханым .. бик үпкәләне, тырышып әҙерләгән аштарын ауыҙ итмәй киткәнгә йәберһенде.* С. Агиш.

**ЙӘБЕРҺЕТЕЛЕҮ** *к. төш. кар.* **йәберһетеү.** *Йәберһетелгән кеше.*

**ЙӘБЕРҺЕТЕҮ** *к.* Ғәҙелһеҙлек менән, каты һүҙ менән рәнйетеү. *Кешене йәберһетеү.*

**ЙӘБЕР-ЯФА** [*гәр.*] *и. йыйн.* Төрлө йәбер һәм яфа. *Йәбер-яфа күреү.*

**ЙӘБЕШЕҮ** *к.* **1.** Куша һылашып, тығыҙ булып тоташыу. *[Айбулаттың] аркаһы кыҙып тирләп, күлдәге йәбеште.* Һ. Дәүләтшина. *Йәмил көрәгенә йәбешкән баткакты кырып таҙартты.* Й. Мостафин. / *күсм.* Урын-еренә килеү; килешеү. *Барсынһылыу үҙе акыллы, үҙе матур, үҙе ягымлы, үҙе уңған бер кыҙ булып сыккан, ти. Һөйләһә, һүҙе килешеп тора, ти, кейһә, кейеме йәбешеп тора, ти.* «Алпамыша».

**2.** Һурылып йәки сәнселеп эләгеү; каҙалыу. *Дегәнәк йәбешкән. Талпан йәбешкән.* ■ *Ас һөлөктәр тәнгә йәбешә лә кан һура башлай.* Һ. Дәүләтшина.

**3.** Ыскынмаҫлык итеп эләктереү; тотоноу. *Йәбешеп ултырыу.* ■ *Әхмәт санаһының урәсәһенә йәбешеп бара.* Д. Юлтый. *Айыуғолак аркан осона йәбешеп төшөп киткән, ти* (Әкиәттән). / Терәк, ярҙам өмөт итеп, кемгәлер һырлығыу; тағылыу. *[Гәрәй — Сакайға:] Кәмәң комға терәлә торғандыр шул. .. Юк инде, йәбешмә миңә, котолор яйыңды үҙең кара.* Б. Бикбай.

**4.** Тиҙ генә алыр өсөн кул һалыу; тотоноу. *Коралға йәбешеү.* ■ *Усманғәле .. ауыҙы йырылып, ағаһының шлемына йәбеште, уны кейеп тә алды.* Ғ. Дәүләтшин. / *күсм.* Һәләтләп, ихласлап керешеү; тотоноу. *Уйынға йәбешеү. Эшкә йәбешеү.* ■ *[Морат — Ильяска:] Таңдан тороп, китапка йәбешкән. Әлеге шул математикамы?* К. Даян. *Былар тағы кәрткә йәбешкән* (Әкиәттән). **Сат** (*йәки* **тас**) **йәбешеү** айырып алғыһыҙ булып, нык тотоноу. *Китапка сат йәбешеү.* ■ *[Гөлйөҙөм — Зәһиткә:] Шунан башканы алмайым, тип, үҙең сат йәбештең бит.* Һ. Дәүләтшина. **Теш-тырнак менән йәбешеү** бик нык күңел һалып ихлас тотоноу. **Һағыҙак** (*йәки* **һағыҙ**) **кеүек йәбешеү** *кар.* **сат йәбешеү.** *Егеттәрҙең сибәрҙәре һағыҙак кеүек йәбешеп тора инде.* Д. Исламов.

**5.** Аймап алып, кулды йәки теште батырыу. *Алкымға йәбешеү. Боғазға йәбешеү. Салғыйға йәбешеү. Ягаға йәбешеү.* ■ *Эт өрөп, [батшаның] үҙенә йәбешә* (Әкиәттән). / *күсм.* Даулап йәки әрләп кемгәлер ташланыу. *Хангильдин район кәңәшмәләренән һүҙ ишетеп, әрләнеп кайттымы — енен сәсеп Ғафарға йәбешә, бөтә гәйепте уға ауҙара.* Н. Мусин. / *күсм.* Талар, көсләр өсөн кул һалыу. *Батшаның катыны, һатып алған колоң миңә йәбешергә итте, тип, баштаға ошаклап, баланы төрмәгә яптырған* (Әкиәттән).

**6.** *күсм.* Йоғоу, эләгеү (ауырыуға карата). *Беҙҙең взвод командиры .. һөйләгәндә, тапма йәбешкән кеше кеүек, тотлогоп-тотлогоп һөйләй.* Д. Юлтый. / Капыл тотоп, нык ауыртыу. *Башка йәбешеү. Эскә йәбешеү.* ■ *Боҙок кымыҙҙы эсһәң, йөрәккә йәбешә.* М. Ғөбәйҙуллин.

♦ **Йәбешеп сығыу** ата-әсәнең рөхсәтенән тыш барыу (кейәүгә); касып сығыу. **Йәбешеп ятыу** нимәгәлер бик ихлас булыу. *Ауылға йәбешеп ятыу. Хужалыкка йәбешеп ятыу.* ■ *Был йорттарҙың хужалары күсенергә кунмәй, торған урындарына йәбешеп ята.* Ф. Иҫәнғолов.

● *Сирләмәгән сир тапкан: кире сире йәбешкән.* Мәкәл. *Телгән икмәк кире йәбешмәй.* Мәкәл.

**ЙӘБЕШКЕ** *и.* **1.** Йомактың мәғәнәһенә тоҫмал яһарлык билдә. *Йомағыңдың йәбешкеһе нимә? Йәбешкеһен генә әйт.*

**2.** Ниҙеңдер асылына тоҫмал яһалған нәмә. *Был кушамат та юкка ғына әйтелмәгән. Әлбиттә, уның киссаһы, йәбешкеһе, үҙенә күрә тамыры бар.* Н. Кәрип.

**ЙӘБЕШКӘК** [1] *с.* **1.** Һылашып, йәбешеп тороусан. *Йәбешкәк кар. Йәбешкәк мәте.* ■ *Айҙарҙың битенә әллә ниндәй йәбешкәк май һөрткәндәр.* З. Рафиков.

**2.** *күсм.* Кешегә һырлығып, йәбешеп барыусан. *Йәбешкәк кеше.*

♦ **Йәбешкәк кағыҙ** себенде йәбештереп тота торған кағыҙ.

**ЙӘБЕШКӘК** [2] *и.* Вак бет.

**ЙӘБЕШКӘК** [3] *и. диал.* Энәлек.

**ЙӘБЕШКӘКЛӘНЕҮ** *к.* Һыланып, йәбешеп тороусанға әйләнеү.

**ЙӘБЕШКӘКЛӘҮ** *к.* Йәбешкәклегә, вак бетлегә әйләнеү. *Башы йәбешкәкләп киткән.*

**ЙӘБЕШТЕРЕЛЕҮ** *к. төш. кар.* **йәбештереү** 1, 2.

**ЙӘБЕШТЕРЕҮ** *к.* **1.** Куша һалып, тығыҙ итеп тоташтырыу. *Балсык йәбештереү.* ■ *[Балыксылар] ялангас кая таштарға йәбештереп эшләнгән ер өйҙәрҙә ғүмер иткән.* З. Биишева.

**2.** Елем һ. б. менән беркетеү. *Белдереү йәбештереү.* ■ *[Сания:] Көн дә улар листовка тарата. Шуларҙы йәбештергән өсөн ике-өс билет бирәләр.* С. Агиш.

**3.** *кар.* **каҙалтыу.** *Урмандан талпан йәбештереп ҡайтыу. Тәнгә һөлөк йәбештереү.*

**ЙӘБӘЛДӘШ** *с. диал. кар.* **йомро**[1] 3.

**ЙӘҒНИ** *аныҡ. терк.* Әйтелгән һүҙ йәки фекерҙе сисеп, асыҡлап биргән һөйләм һәм һөйләм киҫәктәрен теркәү өсөн ҡулланыла. *[Әмирханов:] Шауламағыҙ инде, йәмәғәт, йәғни иптәштәр.* С. Агиш. *Ахырына ҡуйған хоҙай үҙ имзаһын. Имзаһын, йәғни илаһи тамғаһын.* Ш. Бабич.

**ЙӘҒНИ-МӘҪӘЛӘН** *аныҡ. терк. кар.* **йәғни.**

**ЙӘҒРӘФИ** [*ғәр.*] *с. иҫк.* Географик. *Йәғрәфи атамалар.*

**ЙӘҒРӘФИӘ** [*ғәр.*] *и. иҫк.* География. *Тәбиғи йәғрәфиә. Экономик йәғрәфиә. Башҡортостан йәғрәфиәһе.*

**ЙӘДИДИ** *с. тар.* **1.** Йәдитселеккә бәйле, йәдитселеккә ҡараған. *Йәдиди мәктәп.*

**2.** *и. мәғ.* Йәдитселек яҡлы, яңылыҡ яҡлы кеше. *Ҡәдимиҙәр менән йәдидиҙәр араһында көрәш барған мәл ине.* Ф. Иҫәнғолов.

**ЙӘДИТ** [*ғәр.*] *и. тар.* **1.** Яңылыҡ, мәғрифәтселек яҡлы кеше.

**2.** *кар.* **йәдитселек.** *Йәдит муллаһы. Йәдит мәктәбе.*

**ЙӘДИТЛӘНЕҮ** *к. тар.* Йәдиткә (1 мәғ.) әйләнеү.

**ЙӘДИТСЕ** *и. тар.* Йәдитселек яҡлы кеше. *Йәдитселәрҙең әйәрсендәре арта. Тәбиғи ғилем, хәҡикәт һөйөүселәр улар яғына ауа башлай.* М. Ғафури.

**ЙӘДИТСЕЛЕК** *и. тар.* 19 быуат аҙағында 20 быуат башында барлыҡҡа килеп, батшалыҡҡа ҡаршы революцион көрәш урынына мәҙәниәтселекте, мәғрифәтселекте алға һөргән татар һәм Урта Азия милләтсел буржуазияһының буржуаз-либераль хәрәкәте.

**ЙӘДКӘР** *и. кар.* **ядкәр.**

**ЙӘҘРӘ** [*рус.* **ядро**] *и.* **1.** (*йәки* **туп йәҙрәһе**) Боронғо шыма көбәкле туптың тумалаҡ снаряды. *Йәҙрә ярылыуҙары, картечь тауыштары — барыһы бергә буталды.* А. Таһиров.

**2.** (*йәки* **мылтыҡ йәҙрәһе**) Һунар мылтығының эре хайуанға ата торған ҡурғаш пуляһы. *Айыу йәҙрәһе.* ■ *Хыялбайға тейҙе мылтыҡ йәҙрәһе, сыҡты йәне, ҡалды үле кеүҙәһе.* Ш. Бабич.

**ЙӘҘҮӘЛ** [*ғәр.*] *и. иҫк.* **1.** Төрлө мәғлүмәтте тәртип менән теҙеп биргән яҙма йәки һыҙма; таблица, график. *Ҡабатлау йәҙүәле.* ■ *Ерле дәүләт сәнғәтенең .. уҙған юлын йәҙүәл рәүешендә күҙ алдына килтереп була.* «Совет Башҡортостанының ун йылы», 1929.

**2.** Эш башҡарылыу ваҡытын һәм урынын теҙеп күрһәткән яҙма; расписание. *Дәрестәр йәҙүәле.*

**ЙӘҘӘК** [*рус.* едок] *и. тар.* Аслыҡ ваҡытта дәүләттән ярҙамға яҙыҡ алған йән башы һәм шул ярҙам. *Йәҙәк ашы.* ■ *[Килдебай ҡусты] йәҙәк сыҡҡанда үҙебеҙҙе, атыбыҙҙы эшләтеп, аҡ күмәскә түйҙырып торҙо.* Ғ. Дәүләтшин.

**ЙӘЖӘНКӘ** [*рус.* лежанка] *и. диал.* Ләжәнкә. *Сана йәжәнкәһе.*

**ЙӘЗБӘ** [*ғәр.*] *и.* Түңәрәк һыҙа торған ҡорал; циркуль. *Уҡыусының муҡсаһында дәфтәре менән ҡәләме лә, йәзбәһе лә булыр.* Ғ. Хөсәйенов.

**ЙӘЗИТ** *с. диал.* Яуыз, бәләсел.

**ЙӘЗҮР** *и. иҫк.* Дин буйынса, ҡорбанға тәғәйенләнгән мал. *[Моратулла — Ҡараһаҡалға:] Ислам динен көсәйтеп, юлын асып бирергә, йәзүрҙәрен ҡырырға, өлөшөнән булырға ебәрелгән илсе һин.* «Ҡараһаҡал».

**ЙӘИҺӘ** *бүл. терк.* Йәки. *Мәрйәм донъя күргән йәиһә тәрбиә итеүсеһе булған бер ҡыҙ булһа, әлбиттә, быларға алданмаҫ ине.* М. Ғафури.

**ЙӘЙ** *и.* Йылдың яҙ менән көҙ араһындағы иң йылы ваҡыты. *Йәй айҙары. Йәй уртаһы. Йәй көнө.*

◆ **Йәй йөрөм** *кар.* **йөрөм. Йәй ташы** *кар.* **таш.**

● *Йәйгә сыҡҡан йән үлмәҫ.* Әйтем. *Йәй ҡышты түйҙыра.* Әйтем.

**ЙӘЙГЕ** *с.* **1.** Йәй көнөндәге, йәйгә хас. *Йәйге ҡояш. Йәйге селлә. Йәйге таң. Йәйге кис. Йәйге эҫе. Йәйге ямғыр. Йәйге ял.* ■ *Ул әбей йәйге еләк ваҡытында болонға килеп, йәш ҡыҙҙарҙы алдап алып китә лә, юҡ итә, ти* (Әкиәттән). *Йәйге йәмле көндәрҙә күтәрелә дауылдар* (Халыҡ йырынан).

**2.** Йәй өсөн тәғәйенләнгән, йәйен файҙаланыла торған. *Йәйге кейем. Йәйге театр.*

**ЙӘЙГЕЛЕК** *и.* Йәйге ваҡыт. *Йәйгелеккә ит ҡаҡлау. Йәйгелеккә ауылға китеү.* ■ *— Әсәй, әйттем бит һиңә, йәйгелеккә бында алып ҡайтырмын.* Н. Мусин.

**ЙӘЙГЕҺЕН** *р.* Йәйге ваҡытта. *Йәйгеһен ял итеү. Йәйгеһен ауылда эш күп була.*

**ЙӘЙГОР** *и.* Һауалағы ямғыр бөртөктәрендә ҡояш нуры сағылғандан яһалып, дуғаланып күренеп торған төрлө төҫтәге буй-буй һыҙат. *Йылы ямғыр үткәс, йәйгор ҡалҡҡас, хуш еҫ бәреп инде бүлмәгә.* С. Кулибай. *Сыуаҡ ямғыр үтте, йәшәрҙе туғай, ҡырҙар, урман, аҡландар; йәйгор сыҡты, әйтерһең дә күккә төрлө-төрлө таҫма таҡҡандар.* Т. Арслан.

**ЙӘЙҘЕРЕҮ** *к. йөкм. кар.* **йәйеү.** *Ашъяулыҡ йәйҙереү. Иҙән йәйҙереү. Урын йәйҙереү.*

**ЙӘЙҘӘҮ** *и. диал.* Тирмә.

**ЙӘЙҘӘҮКӘ** *и. диал.* Йәйләүес.

**ЙӘЙЕК**[1] *и.* Ылыҫлы ағастың тарбаҡлы ботағы. *Артыш йәйеге. Шыршы йәйеге.* ■ *[Әбделнәғим бабай] бер киң йәйекле ҡарағай эргәһенә барып ултырҙы.* Н. Мусин.

**ЙӘЙЕК**[2] *с.* Арҡырыға йәйелгән; йәйенке; киң. *Йәйек ҡойроҡ кир бейә, ти, тайҙар менән ул да юҡ, ти.* «Аҡһаҡ ҡола».

**ЙӘЙЕК**[3] *и. диал.* Йәйет.

**ЙӘЙЕЛДЕРЕЛЕҮ** *к. төш. кар.* **йәйелдереү.**

**ЙӘЙЕЛДЕРЕҮ** *к.* **1.** Ян-яҡҡа киң итеп йәйеү. *Итәктәрен йәйелдерә кейгән Төхвәт байҙар .. ауыҙҙарын йырып көләләр.* Т. Хәйбуллин.

**2.** *күсм.* Киң күләмдә таратыу. *Көрәште йәйелдереү. Ярышты йәйелдереү.* ■ *Бырауласылар яңы скважиналарҙы тиҙерәк үҙләштереү өсөн көрәш йәйелдерҙе.* К. Мәргән.

**ЙӘЙЕЛЕҮ** *к.* **1.** *төш. кар.* **йәйеү.** *Ҡаҙан тултырып ит һалынды, 5—6 йәймә һалма йәйелде.* З. Биишева.

**2.** Арҡырыға киң булыу, иркен ерҙе биләү. *Йәйелеп үҫеү. Йәйелеп ятҡан диңгеҙ. Йәйелеп ятҡан ялан.* ■ *Алыҫ Аҡтүбәгә саклы диңгеҙ йәйелгән.* Ғ. Әмири. *Һуҡмаҡ үрләй. Алда ҡапыл йәйелеп китә киң туғай.* М. Кәрим. / *күсм.* Иркен, рәхәт тойоу; иркенләү, кинәнеү. *[Ташбулат] йәйелеп ултырып, кәйеф менән генә тартырға тотонто.* И. Насыри. *Йәйелеп ятып уҡырға ваҡыт булманы.* М. Хәйҙәров. *Ишмәмәт — ул күпте күргән, күпте белгән, йәйелеп китеп һөйләшерлек кеше.* А. Карнай.

**3.** Ян-яҡҡа киң булып таралыу. *Һыу ярҙан аша һуғып, туғайға йәйелде.* М. Тажи. *Шыма аҡ ҡағыҙға ҡара йәйелмәй. Ямғыр яуыр алдан төтөн һауаға күтәрелмәй, ергә йәйелә.*

**4.** *күсм.* Киң күләмдә таралыу. *Хәбәр ил араһына йәйелде.* ■ *Был хәрәкәт йәйелеп өлгөрмәгән, яҡын тирәлә ятҡан атлы ҡаҙаҡтар уны баҫып өлгөргән.* Д. Юлтый.

**ЙӘЙЕЛЕШЕҮ** *к. урт. кар.* **йәйелеү** 2. *Йәйелешеп ултырыу.*

**ЙӘЙЕМ** *и.* Баҫып йәйелгән бер өлөш. *Бер йәйем туҡмас.* ■ *[Ҡыҙҙар] ике йәйемгә бүленеп, тубыҡтан батып, балсыҡ баҫырға тотондо.* Һ. Дәүләтшина.

**ЙӘЙЕН** [1] *и.* Киң ялпаҡ ауыҙлы, оҙон мыйыҡлы, сөсө һыуҙа йәшәгән шыма тәнле, тәңкәһеҙ бик эре йыртҡыс балыҡ. *Йәйен ҡармағы.* ■ *Инде ярға сығарғас ҡына, ҙур бер йәйен йылымды йыртып сығып ҡаса.* И. Насыри.

◆ **Йәйен ауыҙ** ҙур ауыҙлы кешегә мыҫҡыллап әйтелә.

**ЙӘЙЕН** [2] *р.* Йәйге көндә, йәйге ваҡытта. *Яҙ көнө ул [дала] аллы-гөллө мең төрлө сәскә менән ҡаплана, йәйен бер өҙлөкһөҙ тулҡынып, сайҡалып ятҡан ҡылған диңгеҙенә әйләнә, көҙөн уны татырлы аҡһыл тупраҡ ҡаплай.* З. Биишева.

**ЙӘЙЕНКЕ** *с.* Арҡырыға киң булып йәйелгән; киң. *Йәйенке танау.* ■ *Йәйенке лә ботаҡ һай ҡарағай йәм бирәлер бейек тауҙарға.* «Ҡуңыр боға».

**ЙӘЙЕН-ҠЫШЫН** *р.* Йәй көнө лә, ҡыш көнө лә; йыл әйләнәһенә. *[Әптерәш ағай] ғүмер буйы эшләп өйрәнгән, йәйен-ҡышын эшләй.* Д. Юлтый.

**ЙӘЙЕНЛЕК** *и.* Йәйен [1] ҡармағы. *Йәйенлек һалыу.*

**ЙӘЙЕТ** *и.* Йәйелеп ятҡан яҙғы ташҡын һыу.

**ЙӘЙЕҮ** *к.* **1.** Ян-яҡҡа иркен итеп һуҙыу. *Ҡулды йәйеү. Ҡош ҡанатын йәйгән. Ағас ботаҡтарын йәйгән.* ■ *Аҙнагол ҡоласын йәйеп, кәмәлә аяғүрә баҫып килә.* З. Биишева. *Ул бармаҡтарын йәйеп, ҡулын күкрәгенә ҡуйҙы.* С. Агиш.

**2.** Йоҡа, киң нәмәне тағатыу; яҙыу. *Ашъяулыҡ йәйеү. Кейеҙ йәйеү. Өҫтәлгә картаны йәйеп һалыу.* ■ *Үҙе торҙо, ярға күҙ ташланы, .. унан чертёждарын йәйҙе.* Ғ. Сәләм. *Егет ҡулындағы балаҫын ергә йәйеп һала* (Әкиәттән).

**3.** Ятыр йәки ултырыр өсөн аҫҡа түшәү. *Түшәк йәйеү.* ■ *Ямал Сәғиҙәне арба аҫтына бесән йәйеп, балаҫ түшәп ятҡырҙы.* М. Тажи. *[Үгәй әсә] йомшаҡ яҫтыҡ йәйеп йоҡларға ятҡан* (Әкиәттән).

**4.** Ҡоршап, теҙеп һалыу, түшәү. *Иҙән йәйеү. Таҡта йәйеү.*

**5.** Тәгәрләтеп йоҡартыу. *Туҡмас йәйеү. Һалма йәйеү.*

**6.** Йоҡа итеп таратыу. *Ҡорот йәйеү. Ҡаҡ йәйеү.* ■ *Сәйәбикә өйөнә инә һалып, алып ҡайтҡан сейәләрен йәйеп ебәрҙе.* Т. Хәйбуллин.

**7.** Киптереү өсөн таратып һалыу, тағатып элеү. *Кер йәйеү.* ■ *[Хисам] ау, нәрәтәләрен яр башына сығарып йәйә лә, .. бесән сабырға тотона.* М. Тажи.

**8.** Төрлө ергә, ҙур майҙанға күсеү, үрсеп таралыу. *Торна, өйрәк, ҡыр ҡаҙҙар, туғаҙаҡ менән сел, ҡорҙар бала сығарып, түл йәйеп, балалары ҡош бул[ған]* (Ҡобайырҙан).

**ЙӘЙКӘ** *и. диал.* Сынаяҡ аҫты.

**ЙӘЙЛЕК** *и. кар.* **йәйгелек.**

**ЙӘЙЛӘҮ** [1] *к.* Ҡайҙалыр йәй тороу. *Йәйләүҙә йәйләү.* ■ *— Аҡ тирмәләр ҡороп, өйөр-өйөр йылҡылар әйләп, йәйләп йөрөгән замандар кире ҡайтмаҫ.* Б. Бикбай.. *Урман эсендә, тау ҡултығында күл бар. Унда аҡҡоштар йәйләй.* Ф. Иҫәнғолов. *Йәйгелеген бында йәйләгәйнем, ҡышҡылығын ҡайҙа ҡышлайым* (Халыҡ йырынан).

**ЙӘЙЛӘҮ** [2] *и.* **1.** *тар.* Ауыл менән ҡырға күсеп, йәй тора торған урын. *Йәйләүгә сығыу. Йәйләүҙән ҡайтыу.* ■ *Ғүмер булһа, ҡыш бына ғына тора, үтә лә китә ул. Яҙ булыу менән йәйләүгә сығаһың.* Т. Йәнәби. *Яланда үнлап тирмә — башҡорт йәйләүе.* Ғ. Хәйри.

**2.** Ферма малын аҫрай торған йәйге урын. *«Бүләктау» колхозының һауын һыйырҙары бер нисә төркөмгә бүленеп, йәйләүгә сығарылды.* Д. Исламов.

**ЙӘЙЛӘҮ** [3] *и.* Икмәк бешереү өсөн киң итеп дүрткелләп эшләнгән тимер таба.

**ЙӘЙЛӘҮ** [4] *и. диал.* Йәй көнө аш бешерә торған асыҡ урын; тышҡы усаҡ.

**ЙӘЙЛӘҮЕК** *и. кар.* **йәйләүлек.**

**ЙӘЙЛӘҮЕС** *и.* Йәй тыуған бәрәс.

**ЙӘЙЛӘҮЕСЛӘҮ** *к.* Йәй бәрәсләү. *Бер нисә һарыҡ әле яңыраҡ ҡына йәйләүесләне.* И. Ғиззәтуллин.

**ЙӘЙЛӘҮЛЕК** *и.* Йәйләүгә сыға торған урын. *Йәйләүлектәр китте, малдар бөттө, инде ҡалды һағынып һөйләргә* (Халыҡ йырынан).

**ЙӘЙМӘ** [1] *и.* Йәйә һалып, табала бешереп алынған икмәк; көлсә. *Йәймә бешереү.* **Ҡаҙан йәймәһе** майҙа ҡайнатып, ҡаҙанда бешергән йәймә. / Йоҡа ғына итеп, майға йәки һурпаға бешереп, үлгән кешенең өсөн, етеһен, ҡырҡын уҡытҡанда ҡуя торған ашамлыҡ. *Йәймәгә саҡырыу.*

**ЙӘЙМӘ** [2] *и.* **1.** Өҫтән йәйеп, ҡаплай торған нәмә; япма. *Самолёт беҙҙе бейеккә күтәрҙе. Ҡар йәймәһе ябынған ялан.*

**2.** Түшәк өҫтөнән йәйә торған йоҡа аҡ нәмә. *Түшәккә йәймә йәйеү.*

**ЙӘЙНӘҮ** *к. диал.* Йәйрәү. *Йәйнәп ултырып сәй эсеү. Йәйнәп ятыу.*

**ЙӘЙПЕ** [1] *с. диал.* **1.** *кар.* **йәйпәк** 1. *Йәйпе ҡаҙан.*

**2.** Йәйенке. *Һай ғына йәйпе йылға буйына Ялпаҡйылға ауылы ултырған.* Ғ. Дәүләтшин.

**ЙӘЙПЕ**[2] *и. диал.* Сынаяҡ аҫты.

**ЙӘЙПЕС** *с. диал. ҡар.* **йәйпәк** 1. *Йәйпес һауыт.*

**ЙӘЙПӘК** *с.* **1.** Киң, йәйенке ауыҙлы (һауытҡа ҡарата). *Ғибат үҙе аяҡсы булып йөрөй. Уның бер ҡулында йәйпәгерәк сеүәтә, икенсеһендә кәкре һаплы ағас ижау.* Ж. Кейекбаев. / *и. мәғ.* Киң ауыҙлы һай һауыт. *Йәйпәк менән ҡымыҙ эсеү.*

**2.** Киң, ялпаҡ булып йәйелгән. *Буфетсы асыҡ сырайлы, йәйпәгерәк битле .. бер ҡыҙ ине.* Б. Бикбай.

**ЙӘЙПӘКЛӘНДЕРЕҮ** *ҡ.* Йәйпәккә (2 мәғ.) әйләндереү, йәйпәк итеү; йәйпәкләү.

**ЙӘЙПӘКЛӘНЕҮ** *ҡ.* Йәйпәккә (2 мәғ.) әйләнеү.

**ЙӘЙПӘКЛӘҮ** *ҡ.* Йәйпәк (2 мәғ.) итеү. *Уның [бағананың] бер яғы йәйпәкләп юнылған да шыма итеп йышылған.* Б. Хәсән.

**ЙӘЙРӘ** *и.* Арҡаһы, ҡабырғаһы бик оҙон энәләр менән ҡапланған кимереүсе йәнлек.

**ЙӘЙРӘН** *и.* Алғы, Урта һәм Үҙәк Азияның сүллек һәм ярым сүллектәрендә, шулай уҡ Кавказ артында һәм Ҡаҙағстанда осраған илек төрөндәге хайуан.

**ЙӘЙРӘТЕҮ** *ҡ.* **1.** Иркен, киң итеү, киң ерҙе биләтеү; йәйелдереү. *Малды яҡшылап, йәйрәтеп ашатыу.*

**2.** *күсм.* Иркенлек, рәхәтлек биреү, кинәндереү, иркенләтеү. *Йәйрәтеп йоҡлатыу. Йәйрәтеп ултырып сәй эсереү. Йәйрәтеп ултырып һөйләштереү.*

**ЙӘЙРӘҮ** *ҡ.* **1.** Иркен, киң булыу; киң ерҙе биләү; йәйелеү. *Йәйрәп үҫеү. Йәйрәп китеү. Йәйрәп ятҡан баҫыу. Йәйрәп киткән дала.* ■ *Әллә арналғанмы ул йыр яҡты йондоҙға, йәйрәп ятҡан яландарға, хәтфә болонға?* Салауат Юлаев. *Заятүләк .. ай яҡтыһында йәйрәп ятҡан тын күлдең матурлығына хайран булып, оҙаҡ ҡарап тора.* «Заятүләк менән Һыуһылыу».

**2.** *күсм.* Иркенлек, рәхәтлек тойоу; кинәнеү, йәйелеү. *Йәйрәп йөрөү. Йәйрәп ултырыу. Йәйрәп ятып йоҡлау. Йәйрәп китеп һөйләшеү.* ■ *Ҡарт йәйрәп китеп мунса инеп ята икән* (Әкиәттән).

**ЙӘЙСӘН** *и. ҡар.* **ләйсән.**

**ЙӘЙӘ**[1] *и.* Уҡ атыу өсөн бөгөп кереш тартҡан ҡорал, ян. *Йәйә тартыу.*

**ЙӘЙӘ**[2] *и.* Ярым түңәрәк йәки ярым квадрат рәүешендәге пунктуацион билдә. *Квадрат йәйә. Йәйә асыу. Йәйә эсенә алыу.*

**ЙӘЙӘҮ** *р.* Үҙ аяғың менән атлап. *Йәйәү барыу. Йәйәү йөрөү.* ■ *Ырымбур яғына йәйәү сығып киттек.* Т. Йәнәби. *Килен аттан төшөп, йәйәү йүгерә* (Әкиәттән).

◆ **Ҡара йәйәү** бөтөнләй атһыҙ. *Ҡара йәйәү ҡалыу.* ■ *Атайымдың ҡара йәйәү интеккән сағы ине. Йәғни Ҡолағашҡа әле юҡ тигән һүҙ.* С. Кулибай.

**ЙӘЙӘҮЛЕ** *с.* **1.** Йәйәү барған, йәйәү йөрөгән. *Оло юлдан бер йәйәүле кеше тоҡсай артмаҡлап, талғын ғына атлап килә ине.* Б. Бикбай.

**2.** Йәйәү хеҙмәт иткән. *Йәйәүле һалдат.* ■ *Йәйәүле ғәскәр Днепрҙың арьяғына төндә сыҡты.* «Башҡортостан батырҙары», 1959.

◆ **Йәйәүле буран** *шул уҡ* **һепертмә буран** (*ҡар.* **буран**).

● *Йәйәүлегә янсыҡ та ауыр.* Мәҡәл.

**ЙӘЙӘҮЛЕ-ЯЛПЫЛЫ** *с.* Йәйәүләп килгән. *Йәйәүле-ялпылы кешеләр.*

**ЙӘЙӘҮЛӘТЕЛЕҮ** *ҡ. төш. ҡар.* **йәйәүләтеү** 1. *Йылға ярында йәйәүләтелгән эскадрондар ята.* Ә. Ихсан.

**ЙӘЙӘҮЛӘТЕҮ** *ҡ.* **1.** Йәйәү атлатыу. *Сафҡа теҙеп, йәйәүләтеп алып китеү.*

**2.** *диал. ҡар.* **кинәнеү** 2. *Йәйәүләтеп ултырып сәй эсеү.*

**ЙӘЙӘҮЛӘҮ** *ҡ.* Йәйәү атлау. *Йәйәүләп барыу. Йәйәүләп килеү. Йәйәүләп ҡайтыу. Төшөп йәйәүләү.* ■ *[Крәҫтиәндәр] бүлеп бирелергә тейешле булған ергә табан йәйәүләй.* Ғ. Хәйри. *Ватандың арғы сигенән йәйәүләп сыҡһаң әгәр, йыл йөрөһөң, етә алмаҫһың бирге сигенә кәҙәр.* Р. Ниғмәти.

**ЙӘЙӘҮЛӘШЕП** *р.* Йәйәү бергә. *Йәйәүләшеп килеү.*

**ЙӘКИ** [*фарс.*] *бул. терк.* Мәғәнә яғынан береһен береһе алмаштырған ике һөйләм йәки һөйләм киҫәген алмаштырып теркәү өсөн ҡулланыла; йәиһә. *Иртән йәки кис менән. Һин йәки мин.* ■ *Ер хуры һин йәки ожмах шәүләһе, һындарың ғүйә фирештә кәүҙәһе.* Салауат Юлаев. — *Йә, алайыҡ һине йәки мине, беҙ бит икәү айырым инек бит.* Ғ. Амантай.

**ЙӘКҮН** [*ғәр.*] *и. иҫк.* Йомғаҡ, һөҙөмтә. *Эштең йәкүне.* ■ *Мазлумов бығаса әйткәндәренә йәкүн яһағандай һөйләп китте.* Ғ. Ғүмәр.

**ЙӘКШӘМБЕ** [*фарс.*] *и.* Аҙнаның һуңғы, етенсе көнө; дөйөм ял итеү көнө. *Йәкшәмбе көн ҡала театрына барам.* Ғ. Хәйри.

**ЙӘКӘЛ** *и. диал.* Бәкәл, бәкәлсәй.

**ЙӘЛ** [*рус.* жаль] *хәб. функцияһында* **1.** Әсенеү, һыҙланыу, үкенеү, аяу тойғоһон белдерә. *Айбулат [Ҡотлоярҙың] ауыр тормоштан бик йонсоғанын күрҙе, йәл булды.* Һ. Дәүләтшина. *Балта йәл булды, һорап ҡараһам да кире бирмәне.* М. Тажи. *Үҙ илкәйе өсөн ҡорбан булған ир-егеттең ғүмере йәл булмаҫ* (Халыҡ йырынан). *Туғаныңды утҡа һалдылар, йәл түгелме һиңә, ағакай?* (Сеңләүҙән). *[Ҡыҙ — Айыуғолаҡҡа:] Ниңә улай ҡарайһың, әллә йорт йәл ҡаламы?* (Әкиәттән).

**2.** Ниҙелер бирергә, исраф итергә ҡыҙғаныу тойғоһон белдерә. *Йоҡо йәл. Күҫ йәл.*

● *Үҙем тапҡан мал түгел, атайҙыҡы йәл түгел.* Әйтем.

**ЙӘЛБЕР-ЙӨЛБӨР** *оҡш.* Ваҡ-ваҡ ҡына, еңел генә һелкенгәндә белдергән һүҙ (йоҡа нәмәгә ҡарата). *Йәлбер-йөлбөр итеү. Йәлбер-йөлбөр килеү.*

**ЙӘЛБЕРСӘК** *и. диал.* Итәктәге ваҡ ҡатмар.

**ЙӘЛДӘК** *с.* Хәйләле, йылғыр алдай торған. // *[Фәхри:] Фермаға күҙ һалып ҡайтырға кәрәк, ул йәлдәктәргә ышаныс юҡ.* Б. Бикбай.

**ЙӘЛДӘКЛӘНЕҮ** *ҡ.* Йәлдәккә әйләнеү.

**ЙӘЛДӘТ**[1] *с. ҡар.* **йәлдәк.**

**ЙӘЛДӘТ**[2] *и. ҡар.* **йәлдәү.**

**ЙӘЛДӘҮ** *и.* Мурҙаның ауыҙланып, эскә инеп торған өлөшө.

**ЙӘЛЕП** [*ғәр.*]: **йәлеп итеү** (*йәки* **ҡылыу**) ылыҡтырыу, тартыу. *Игтибарҙы йәлеп итеү. Баланы мәктәпкә йәлеп итеү. Кешене эшкә йәлеп итеү.* ■ *Ул [Кәримә апай] миңә һәр ваҡыт йылы йөҙ күрһәтә, .. минең янған күңелемдә үҙенә йәлеп ҡыла торғайны.* М. Ғафури. *Селдәр ҡыш көнө йылыға тамаҡтарына яҡыныраҡ һыйына, уларҙы ерек бөрөһө йәлеп итә.* «Совет Башҡортостаны», 1986, 2 февраль.

**ЙӘЛЕПЛЕ** *с. кар.* **килешле.** *Йәлепле төҫ. Йәлепле эш.*

**ЙӘЛИЛ** [*ғәр.*] *с. иҫк.* **1.** Бөйөк. *Ғәзиз ата балаһы инем, булдым заил, айырылмаҡты тәҡдир ҡылды мәүләм йәлил* (Халыҡ шиғырынан).
**2.** (*баш хәреф менән*) Ир-ат исеме.

**ЙӘЛКЕ** [*рус.* жалко] *хәб. функцияһында һөйл. кар.* **йәл.**

**ЙӘЛЛӘТ** [*ғәр.*] *и. иҫк.* **1.** Баш киҫеүсе, палач.
**2.** *күсм.* Ҡанһыҙ, мәрхәмәтһеҙ кеше. *Йәндәр ҡыйыла, йәлләт, яуыздар, ҡанлы ауыҙҙар ҡанун яһайҙар.* Д. Юлтый.

**ЙӘЛЛӘТЕҮ** *к. йөкм. кар.* **йәлләү** 1.

**ЙӘЛЛӘҮ** *к.* **1.** Аяныс хәлдә күреп, әсенеү, ҡыҙғаныу. *[Кәрим] әсәһенең сал сәстәренә, һурылған йөҙөнә ҡарап йәлләне.* Я. Хамматов. *Һауаларға уҡ сорғоттом, ҡарлуғасҡа тейҙе уҡҡынам. Аяҡайым янына ҡолап төшкәс, меҫкен ҡошто йәлләп юҡһынам.* Салауат Юлаев.
**2.** Бирергә, исраф итергә йәл күреү, ҡыҙғаныу. *Аҡса йәлләү. Йоҡоно йәлләү. Көстө йәлләү.* ■ *[Дауыт:] Йә, әсәй, йәлләмә инде. Берҙән-бер улыңдан йәлләгән малыңды эт ашаһын.* Ш. Янбаев. *Дан сығарыр ирҙәр йән йәлләмәҫ, йәнде йәлләү менән дан булмаҫ* (Халыҡ йырынан).

**ЙӘЛЛӘҮЕС** *с.* Әсенеү, аяу тойғоһо уятҡыс; йәл. *Вагондан төшкән кешеләргә ҡарауы бик тә йәлләүес ине: барыһы ла йонсоған, талсыҡҡан, йөҙҙәренән хәсрәт бәрелеп тора.* К. Кинйәбулатова. *Йортона ҡайтҡанда Разифаны ҡаршы алыусы берҙән-бер йән эйәһе ошо Аҡҡойроҡ булды. Көсөк кенә ине әле, йәлләүес кенә.* Ш. Янбаев.

**ЙӘЛЛӘШЕҮ** *к.* **1.** *урт. кар.* **йәлләү** 1. *Илағас, йәлләшеп уға кәпәсе тулғанса еләк йыйып бирҙек.* Н. Мусин.
**2.** *диал.* Йәлләү.

**ЙӘЛП** *окш.* Етеҙ, еңел хәрәкәтте йәки һалынып торған еңел нәмәнең хәрәкәтен белдергән һүҙ. *Йәлп итеп боролоп ҡарау. Йәлп итеп ҡалыу. Йәлп итеп сығып китеү.* ■ *Туғаҙаҡ .. буҙлап ултырған бисәһен йәлп иттереп күтәреп алды.* Т. Килмөхәмәтов.

**ЙӘЛПЕЛДӘТЕҮ** *к.* Йәлп-йөлп иттереү, йөлп-йөлп килтереү. *Йәлпелдәтеп баҫып килеү. Йәлпелдәтеп алып килеү.* ■ *Саҙрислам .. иҫке шинелде, сабыуҙарын ҡанаттай йәлпелдәтеп күтәрҙе лә икенсе урынға илтеп йәйҙе.* Ф. Иҫәнғолов.

**ЙӘЛПЕЛДӘҮ** *к.* Йәлп-йөлп итеү, йәлп-йөлп килеү. *Йәлпелдәп атлау.* ■ *Юрттырып барғанда томаҡ ҡолаҡтары йәлпелдәп, елеҫ ел бәрә. Эҫе көндә был бик рәхәт була.* Ғ. Ғүмәр.

**ЙӘЛПЕЛДӘШЕҮ** *к. урт. кар.* **йәлпелдәү.** *Йәлпелдәшеп килеү.*

**ЙӘЛП-ЙӨЛП** *окш.* Ҡабат-ҡабат йәлп иткән хәрәкәтте белдергән һүҙ. *Йәлп-йөлп итеү.* ■ *[Ҡотлоғужа ҡарт] йәлп-йөлп баҫып, ауылға ҡарай китте.* Р. Солтангәрәев.

**ЙӘЛП-ЙӘЛП** *окш. кар.* **йәлп-йөлп.** *Йәлп-йәлп итеү. Йәлп-йәлп килеү.*

**ЙӘЛПӘЙЕҮ** *к.* Йәлпәккә әйләнеү, йәлпәк булыу; йәлпәшеү. *Эшләпә йәлпәйгән.*

**ЙӘЛПӘЙТЕҮ** *к.* Йәлпәккә әйләндереү, йәлпәк итеү. *Йәлпәйтә һуғыу.* ■ *Солтан танауын йәлпәйтеп йылмая.* Һ. Дәүләтшина.

**ЙӘЛПӘК** *с.* Яҫы булып йәйелгән; йәйпәк. *Йәлпәк бит. Йәлпәк өй. Йәлпәк танау. Йәлпәк таш. Йәлпәк булыу. Йәлпәк итеү.*

**ЙӘЛПӘКЛӘНДЕРЕҮ** *к.* Йәлпәккә әйләндереү, йәлпәк итеү.

**ЙӘЛПӘКЛӘНЕҮ** *к.* Йәлпәккә әйләнеү, йәлпәк булыу. *Йомаголовтың йөҙө үҙгәрҙе. Һорголт күҙен ҡаплаған киң ҡара ҡашы һалынды, сөм ҡара мыйығы, ҡыҫҡа сәсе тырпайҙы, танауы йәлпәкләнде...* Я. Хамматов.

**ЙӘЛПӘКЛӘҮ** *к.* Йәлпәккә әйләндереү, йәлпәк итеү. *Кубә осон йәлпәкләү.*

**ЙӘЛПӘН-ЙӨЛПӘН** *окш.* Йәлп-йөлптән оҙайлыраҡ хәрәкәтте белдергән һүҙ. *Йәлпән-йөлпән атлау. Йәлпән-йөлпән итеү.*

**ЙӘЛПӘНЛӘТЕҮ** *к.* Йәлпән-йөлпән иттереү, йәлпән-йөлпән килтереү. *Йәлпәнләтә баҫып килеү.*

**ЙӘЛПӘНЛӘҮ** *к.* Йәлпән-йөлпән итеү, йөлпән-йөлпән килеү. *[Рәйсә:] Бына һин әле! Көн дә ошо ваҡытта йәлпәнләп ҡайтып инер ҙә, .. йылмайып өндәшер ине, бөгөн ни эшләне?* Р. Низамов.

**ЙӘЛПӘНЛӘШЕҮ** *к. урт. кар.* **йәлпәнләү.** *Йәлпәнләшеп килеү.*

**ЙӘЛПӘШ** *с.* Яҫы булып йәйелгән; йәлпәк. *Йәлпәш танау.*

**ЙӘЛПӘШЕҮ** *к.* Йәлпәшкә әйләнеү, йәлпәш булыу; ялпашыу. *Йәлпәшеп барып төшөү. Йәлпәшеп ятҡан балсыҡ.*

**ЙӘЛПӘШТЕРЕҮ** *к.* Йәлпәшкә әйләндереү, йәлпәш итеү. *Йәлпәштерә һуғыу. Кәбәнде йәлпәштереп һалғандар.*

**ЙӘЛСЕТЕҮ** *к.* **1.** Файҙаһын күрерлек, кинәнерлек итеү; кинәндереү. *[Мозафар] колхозда йәлсетеп эшләмәне.* Ф. Иҫәнғолов.
**2.** Нимәгәлер булған ихтыяжды ҡәнәғәтләндереп, шатландырыу; кинәндереү. *Үткән йылғы йәй ямғырға йәлсетмәне.* ■ *Тамсы ла кәйеф юҡ, күңелдә тик һағыш, шатлыҡҡа йәлсетмәй, ҡаныҡты был яҙмыш.* А. Игебаев.
**3.** Тыныслыҡ, иркенлек менән йәшәтеү. *Бабай һеләүһенде йәлсетмәне, булған береһен тотоп торҙо.*

**ЙӘЛСЕҮ** *к.* **1.** Файҙа, рәхәт күреү; кинәнеү. *[Гөлйөҙөм:] Тимерхан тәкәтте коротто инде. Йәлсемәнек беҙ унан.* Я. Вәлиев. *Ихлас хеҙмәт итеп ҡараһам да, һис бер йәлсеп йәшәй алманым.* Б. Вәлит. *Мине лә генә биреп бер ҡатайға, йәлсерһең дә микән, атаҡайым* (Сеңләүҙән).
**2.** Нимәгәлер булған ихтыяжды ҡәнәғәтләнде-

реп, шатланыу; кинәнеү. *Онга йәлсеү.* ■ *Үмәр карт тирә-йүнгә яманаты сыккан, гүмерендә иргә йәлсемәгән Бәгиҙәне йәй буйы килене менән бер кыуышта йоклатып, бергә эшләтеп йөрөгәненә үкенде.* Ш. Янбаев.

● *Тимерсе бысакка йәлсемәй.* Мәҡәл.

**ЙӘЛТ** [*фарс.*] *с. иҫк. кит.* Етеҙ, өлгөр.

**ЙӘЛТЛӘҮ** *к. иҫк. кит.* Тиҙләтеү, һәләтләү.

**ЙӘЛТӘНЛӘҮ** *к. диал.* Елтәнләү.

**ЙӘЛТӘФИТ** [*гәр.*]: **ләм йәлтәфит** *иҫк.* иғтибарһыҙ. *Вакытлы матбугаттың биргән аҙыгына боронгоса алган хәбәр таратыусы тип карау вә уны ләм йәлтәфит калдырыу бөтөнләй бөткән.* М. Ғафури.

**ЙӘЛӘҮКӘР** *с. диал.* Арамъя.

**ЙӘМ** *и.* **1.** Төҫ, күренеште матурлаған сифат; күрк. *Йәм биреү. Йәм өҫтәү.* ■ *Карагай ҙа үҫер ай йәм өсөн, бал корттары осор бал өсөн* (Халыҡ йырынан).

**2.** Күңелгә ҡыуаныс, рәхәтлек биргән сифат. *Донъя йәме. Йәм табыу.* ■ *Бала бит ул эшкә көс бирә, тормош йәме күберәк күренә.* Ғ. Сәләм.

● *Ас кешегә аш йәм, тук кешегә бүрек йәм.* Мәҡәл. *Күп аштың тәме юк, күп һүҙҙең йәме юк.* Әйтем. *Тыйнакһыҙ өйҙә йәм тормаҫ.* Әйтем. *Яҙҙың йәме сәскә менән, көҙҙөң йәме көлтә менән.* Әйтем.

**ЙӘМАЛ** *и. кар.* **ямал.**

**ЙӘМБИЛ** *и. иҫк.* Бәләкәй ҡул йышҡыһы; ҡыҫҡа йышҡы. **Бер яклы йәмбил** бер кеше йыша торған йәмбил. **Ике яклы йәмбил** ике яҡтан ике кеше тотоп йыша торған тотҡалы йәмбил. **Кыя йәмбил** ҡыя бысаҡлы йәмбил.

**ЙӘМҒЕ** [*гәр.*] *и. иҫк.* **1.** Йыйылма, берләшмә. *Доходтарҙың дөйөм йәмгеһе .. расходтарҙан күп арта.* «Совет Башҡортостанының ун йылы», 1929.

**2.** *билд. а. мәғ.* Бөтә, барлыҡ. *Йәмге донъя. Йәмге халык.*

*Йәмгебеҙ кул куябыҙ.* ■ *Һалдатты фараз кылдык ки һыуҙагы йәмге балыкка* (Бәйеттән).

□ **Йәмғе булыу** йыйылыу, берләшеү. *Әгәр йәннәт менән тамукты әүсаф кылыуга йәмге булһа каф та каф.* М. Ғафури. **Йәмғе кылыу** йыйыу, берләштереү. *[Рустар] Тургайҙың кыргыҙҙарын йәмге кылды* (Бәйеттән).

**ЙӘМҒЕҺЕ** *билд. а.* Бөтә булғаны, барлығы. *[Шәмсулла:] Ун һигеҙ йукә, егерме өс имән — йәмгеһе кырк бер төп агас.* М. Кәрим.

**ЙӘМҒИӘТ** [*гәр.*] *и.* **1.** Материаль тормоштоң дөйөм булған конкрет-тарихи шарттары ерлегендә күмәге бер бөтөнгә берләшкән халыҡ. *Коммунистик йәмгиәт. Кешелек йәмгиәте.* ■ *Совет дәүләте, уның бөтә органдары .. йәмгиәт мәнфәгәттәрен, граждандарҙың хокук һәм иректәрен һаклауҙы тәьмин итә.* Башҡорт АССР-ының Конституцияһы, 1984.

**2.** Уртаҡ эш, уртаҡ маҡсат йәки башҡа нәмә нигеҙендә берләшкән кешеләр төркөмө. *Географик йәмгиәт. Ғилми йәмгиәт. Ирекле спорт йәмгиәте.* **Йәмғиәте хәйриә** *тар.* мохтаж кешеләргә ярҙам күрһәтеү маҡсатын тотҡан ойошма.

◆ **Йәмғиәт фәндәре** кешене һәм уның культураһын өйрәнә торған фәндәр (тарих, политик экономия, филология һ. б.)

**ЙӘМҒИӘТЛӘШТЕРЕЛЕҮ** *к. төш. кар.* **йәмғиәтләштереү.** *Йәмгиәтләштерелгән мал.*

**ЙӘМҒИӘТЛӘШТЕРЕҮ** *к.* Йәмғиәт (1 мәғ.) ҡарамағына берләштереү. *Ауыл хужалыгын йәмгиәтләштереү.*

**ЙӘМЕ** *киҫ.* Үтенеүҙе, үтенесле өндәүҙе белдергәндә әйтелә; яраймы. *[Гөлйөҙөм:] Бар, балам, бысранмай гына йөрө, йәме.* Һ. Дәүләтшина. *[Сәгиҙә:] Кара, онота күрмә. Онотма, йәме.* М. Тажи.

**ЙӘМИҒ** [*гәр.*] *билд. а. иҫк. кит.* Бөтә, барлыҡ; йәмғе. *Йәмиг халык.*

**ЙӘМИЛ** [*гәр.*] *с. иҫк.* **1.** Матур, гүзәл.

**2.** (*баш хәреф менән*) Ир-ат исеме.

**ЙӘМИН** [*гәр.*] *и. иҫк.* Ант. *Валлаһи, һеҙҙәй әҙәмдәр кыҙганыс, тим, бер йәмин!* Ш. Бабич.

□ **Йәмин итеү** ант итеү. *Выжданым һатмам, тип иттем йәмин.* М. Ғафури. *Яуыз, боҙок кешене изге тау тишегенә йәки эш боҙган еренә алып барып йәмин иттерәләр ине. Йәмин иткән урынга ултырһаң, йәлсемәйһең.*

**ЙӘМ-ЙӘШЕЛ.** *с.* Бик ныҡ йәшел, асыҡ йәшел. *Йәм-йәшел үлән.*

**ЙӘМКӘ** [*рус.* емки] *и.* Күмер ҡыҫҡыс. *Мөслимә .. усактан йәмкә менән куҙ алды.* Ф. Исәнғолов. *Усактагы куҙҙы самауыр мөрйәһенә тултырган әсә йәмкәһен куйҙы ла йокомһорап ултырган улы эргәһенә мендәр һалды.* Я. Хамматов.

**ЙӘМЛЕ** *с.* **1.** Ҡарар күҙгә йыуаныс бирерлек төҫө, күренеше булған; күркле, күркәм. *Йәмле бакса. Йәмле йәй. Йәмле булыу. Йәмле итеү.* ■ *Беҙҙең ауыл бик йәмле ергә ултырган.* М. Тажи. *Асык ялан, йәмле тугайҙарҙа бик күңелле үтер гүмерҙәр.* Ш. Бабич. *Агиҙелкәй буйы бигерәк йәмле тирә-ягы тугай булганга* (Халыҡ йырынан).

**2.** Күңелгә йыуаныс, рәхәтлек бирерлек. *Шылтыр, шылтыр .. тауҙан шишмә төшкән. Һауа тулган сирень тәменә. Әллә нисек, бигерәк шундай төндәр үҙе моңло, үҙе йәмле лә.* Ғ. Сәләм. *Шул йәмле донъяла кешенең йәшәгеһе килеп кенә тора, ти.* «Урал батыр».

**3.** *диал. кар.* **матур 1.**

**ЙӘМЛӘНДЕРЕҮ** *к.* Йәмлегә, күркәмгә әйләндереү, йәмле итеү; йәмләү. *Шыршы, нараттар тагы ла баксаны йәмләндерә.* Ш. Бабич.

**ЙӘМЛӘНЕҮ** *к.* Йәмлегә, күркәмгә әйләнеү, йәмле булыу. *Һибелер ҙә орлок һөргән ергә, ер йәшәреп, донъя йәмләнер.* Т. Йәнәби.

**ЙӘМЛӘТЕҮ** *к. кар.* **йәмләндереү.** *Донъяны йәмләтеү.*

**ЙӘМЛӘҮ** *к. кар.* **йәмләндереү.** *Йондоҙ күкте йәмләр, ямгыр ерҙе йәмләр, шагир күңелде йәмләр. Үҙе һылыу кешегә бөтә нәмә лә килешә, тиҙәр. Хатта көлһыу сәстәр ҙә уны йәмләй төҫлө.* Р. Солтангәрәев.

**ЙӘМРӘЙЕҮ** *к.* Кәйефһеҙләнеп, асыуланып, төҫтө боҙоу; емерелеү. *Хәйҙәр .. иренен турһайтып, йәмрәйеп бер караны ла ситкә боролдо.* Ф. Исәнғолов. *Тугаҙак йылмайырга итеп караны. Кашы йәмрәйҙе, һоро бәбәктәре кауышып, сәгер күҙен капланы.* Т. Килмөхәмәтов.

**ЙӘМРӘЙТЕҮ** *к.* Йәмрәйергә сәбәп биреү. *Ғариф староста ҡашын йәмрәйтеп, Хисмәткә ҡараны.* Ж. Кейекбаев.

**ЙӘМ-ТӘМ** *и. йыйн.* Ниҙеңдер бөтә матурлығы, ҡәҙере, йәм һәм тәм. *Дуҫлы кеше йәм-тәм белеп йәшәй, дуҫһыҙ кеше тоҙһоҙ аш төҫлө.* А. Игебаев.

**ЙӘМҺЕҘ** *с.* **1.** Ҡарар күҙгә йыуаныс бирерлек төҫө, күренеше булмаған; күркһеҙ. *Йәмһеҙ булыу. Йәмһеҙ итеү.* ■ *Беҙҙең яткан өй ҡот осҡос йәмһеҙ, стеналары ҡара, түшәмдәре емерелгән, стеналары соҡолған, беҙҙең аяҡ осонда ғына кирбес өйөмдәре ята.* Д. Юлтый. *[Юламан ҡарт] өсөн диңгеҙҙең йәмһеҙ ҙә сағы булмаған.* З. Биишева.

**2.** Күңелгә йыуаныс, рәхәтлек бирер сифаты булмаған. *Көндәрем йәмһеҙ, мөхитем булманы йәнгә кефү, бәс шуныңсөн донъяға минән мәкафәт: кых, тфү!* Ш. Бабич.

**3.** *диал.* Ямаҡ.

**ЙӘМҺЕҘЛӘНДЕРЕҮ** *к.* Йәмһеҙгә (1, 2 мәғ.) әйләндереү, йәмһеҙ итеү.

**ЙӘМҺЕҘЛӘНЕҮ** *к.* Йәмһеҙгә (1, 2 мәғ.) әйләнеү, йәмһеҙ булыу. *Шаулап торған урмандар йәмһеҙләнгән, короғандар, йәнһеҙләнгән, үлгәндәр.— Яу, яу, тимен, яу, ямғыр!* Ш. Бабич.

**ЙӘМҺЕҘЛӘҮ** *к. кар.* **йәмһеҙләндереү.**

**ЙӘМҺЕҘЛӘШЕҮ** *к. диал.* Яманлашыу.

**ЙӘМШЕГӘН** *и. диал.* Энәлек.

**ЙӘМШЕК** *с.* Емерелеп, йәнселеп, рәүеше боҙолған; йәлпәшкән. *[Хәбир:] Мин мороно йәмшек ҡомғандан йыуындым.* Ғ. Хәйри. *[Егеттең] ҡара сәстәре йәмшек кепкаһынан сығып, маңлайына төшкән.* Р. Солтангәрәев. / Йәлпәшеп торған. *Йәмшек танау.*

**ЙӘМШЕЛДӘҮ** *к. диал. кар.* **бәлшәйеү** 2.

**ЙӘМШӘЙЕҮ** *к.* Йәмшеккә әйләнеү, йәмшек булыу. *Йәмшәйгән ҡомған. Йәмшәйгән самауыр.* ■ *Тракторист кеҫәһенән йәмшәйгән папирос алып тоҡандырҙы.* Ә. Вәли.

**ЙӘМШӘЙТЕҮ** *к.* Йәмшеккә әйләндереү; йәмшек итеү. *[Клава] танауын йәмшәйтеп көлдө.* Һ. Дәүләтшина.

**ЙӘМӘҒӘТ** *и.* **1.** Үҙ-ара ниндәйҙер мөнәсәбәте, бәйләнеше булған халыҡ төркөмө. *Йәмәғәт вәкиле. Йәмәғәт ойошмаһы. Йәмәғәт хужалығы. Йәмәғәт эшмәкәрҙәре. Йәмәғәт тәртибе. Йәмәғәт ойошмалары. Йәмәғәт торлаҡ фонды. Йәмәғәт тукланыуы. Социалистик йәмәғәт тормошо. Етештереү сараларына булған йәмәғәт милке.* ■ *[Хәбибуллин] йәмәғәт игене һаҡланған амбарға ут төрткәндә ҡатнашҡан өсөн ҡулға алынды.* Ә. Вәли. **Йәмәғәт эше** йәмәғәттең ижтимағи мәнфәғәттәрен хеҙмәтләндереү менән бәйле эш. *[Тереголов:] Муллабаев батрак балаһы, үҙе лә батрак, йәмәғәт эшендә актив ҡатнаша.* Б. Хәсән. **Йәмәғәт эше рәүешендә** йәмәғәт исеменән башҡарылған түләүһеҙ эш рәүешендә. / Йыйылған халыҡҡа өндәшкәндә әйтелә.— *Кәңәш кәрәк, кәңәш, йәмәғәт. Мәғкул булһа, ҡабул, мәғкул булмаһа, ҡабул ҡылмаҫҡа.* С. Агиш.

**2.** Ғаиләгә алған ҡатын. *Хәләл йәмәғәт. Йәмәғәт алыу.* ■ *Мөхәмәтша карт әле булһа [әбейен] онота алмай. Балалары бар, ләкин бала балдай татлы булһа ла, ғүмер иткән йәмәғәтеңде алмаштыра алмай.* Ғ. Шәрипов.

**ЙӘМӘҒӘТЛӘНЕҮ** *к.* Өйләнеү. — *Әсәй, һиңә эшләргә кеше кәрәк, шуның өсөн мин йәмәғәтләнергә торам* (Әкиәттән).

**ЙӘМӘҒӘТЛӘШЕҮ** *к.* Өйләнешеү.

**ЙӘМӘҒӘТЛӘШТЕРЕЛЕҮ** *к. төш. кар.* **йәмәғәтләштереү.** *Йәмәғәтләштерелгән хужалыҡ.*

**ЙӘМӘҒӘТЛӘШТЕРЕҮ** *к.* Йәмәғәт (1 мәғ.) ҡарамағына берләштереү; йәмәғәтләштереү. *Малды йәмәғәтләштереү.*

**ЙӘМӘҒӘТСЕ** *и.* Йәмәғәт эшенә ҡатнашҡан кеше. *[Мәжһар] актив йәмәғәтсе: дружина командиры, агитатор, пропагандист.* «Ағиҙел», 1967, № 5.

**ЙӘМӘҒӘТСЕЛ** *с.* Йәмәғәт эшен ҡайғыртыусан. *Йәмәғәтсел кеше.*

**ЙӘМӘҒӘТСЕЛЕК** *и.* Йәмәғәт эсендәге ҡумәк халыҡ. *Донъя йәмәғәтселеге. Йәмәғәтселек тормошо. Йәмәғәтселек контроле. Йәмәғәтселек ярҙамы.* ■ *Социалистик демократияны артабан үҫтереү— .. йәмәғәтселек фекерен даими иҫәпкә алыу — совет йәмғиәтенең политик системаһын үҫтереүҙең төп йүнәлеше булып тора.* Башҡорт АССР-ының Конституцияһы, 1984.

**ЙӘМӘРӘ** [*ғәр.*] *и. иҫк. кит.* Ҡуҙ. *Ағастың йәмәрәһе.*

**ЙӘН** [*фарс.*] *и.* **1.** Кешенең эске донъяһы, уй фекере, кисереше, тойғоһо; күңел. *[Ғүмәр:] Кеше балалары .. йән рәхәтләндереп эшләп йөрөй.* Д. Юлтый. *Йәнгә яҡын таныш ерҙәремде тағы бер ҡат боролоп ҡараным.* Х. Ҡунаҡбай. *Юл ауыр булды, шулай ҙа тик ятып йән түҙмәне.* М. Ғафури. *Йәнең ни теләй — бары ла бар* (Әкиәттән). **Йән аҙығы** күңелде күтәргән, ҡәнәғәтлек, рәхәтлек биргән нәмә. *Баһалары тиңһеҙ алтынға йән аҙығы алам халҡымдан.* С. Кулибай. **Йән асыуы** *кар.* **асыу** [1]. *Әсәйем ни әйтергә лә белмәне, йән асыуы менән һуғып ебәрҙе.* Ш. Янбаев. **Йәнгә инеү** йылы һүҙ, яҡшы эш менән кешенең күңелен йылытыу. **Йәнгә тейеү** теңкәгә тейеү, аптыратыу. *[Бай бисәһе:] Ҡыштан алып ашап бөтәләр ҙә, эш ваҡыты етһә, тегене бир ҙә, быны бир тип, йәнгә тейәләр.* С. Ҡудаш. **Йәнде ашау** тынғы бирмәй текемләп әрләү. *[Котлобай:] Йомабикә еңгәң бик ғәрсел бисә бит. Ферманан төшөргәндәре өсөн йәнемде ашай.* Д. Исламов. **Йәнде йолҡоу** 1) бик ныҡ асыуланып әрләү. *Ул [хужа] йәнеңде йолҡа.* Ғ. Ғүмәр; 2) намыҫ белмәй кешенекен алыу. **Йәнде йәрәхәтләү** рәнйетеү. **Йәнде ҡыйнау** ыҙалатыу. **Йәнде үртәү** ныҡ үртәндереү. *[Бай:] Йәнемде үртәйһегеҙ үртәүен, шеш осона сығырға тырышаһығыҙҙыр инде.* Т. Хәйбуллин. **Йәне йөрәк төбөндә** йәне бик аяулы, бик ҡәҙерле. **Йәне рәхәт** (*йәки* **тыныс**) ҡайғы-моң юҡ, күңеле тыныс. *Ғишыҡһыҙҙың йәне тыныс: ятһа, үлеп йоҡлайҙыр* (Халыҡ йырынан). **Йән иреү** 1) күңел рәхәтләнеү; күңел иреү. *Йылы һүҙгә йән ирей;* 2) асыу бөтөү; йомшарыу. *Ул кешегә ғүмер буйы йәнем ирейәсәк түгел.* Д. Исламов. **Йән йоттороу** ныҡ ғазаплау. *Ауыл халкын туҡмап йән йоттороуы етмәгән, йәш бер һалдатканың башын ашаны.* Ж. Кейекбаев. **Йән көйөү** асыу килеү, үртәнеү. *Фәрхиә ҡайһы саҡта,*

*бөйөрөнә таяна биреп, Йәмгиҙең эшләгәненә карап тора. Йәмгиҙең быға йәне көйә.* Х. Ғиләжев. **Йән көйөгө** асыуға тейгес, асыуҙы килтергес. **Йән кайышыу** йөрәк һыҙлау, нык әсенеү. *Атакайым мине йәштән бирҙе, кайышмай микән уның йәндәре* (Сеңләүҙән). **Йән карайыу** бик нык асыу килеп үртәнеү. **Йән кыйылыу** *шул уk* **бәгер кыйылыу** (*кар.* **бәгер**). **Йәнде кыйнау** ыҙалатыу. **Йән рәхәте** бик рәхәт. *Йән рәхәте һөйгән йәр менән* (Халыk йырынан). **Йән тартыу** теләк булыу; күңел тартыу. *Һатыу эшенә йән тартмай.* **Йән тетрәү** бик кыҙғаныс йәки куркыныс нәмәнән каты кисерешкә төшөү. *Шундай бер йыр йырлармын — кыҙҙарҙың йәне тетрәр.* Р. Шәкүр. **Йән һөйгән** бик нык яраткан. **Йән һөймәү** бик нык яратмау. *Кеше эшенә кыҫылыуҙы йәнем һөймәй.* Н. Нәжми. **Йән әсеү** әсенеү, әрнеү. *Иҫ белгәндән бирле күргән нужалары күҙ алдына килеп, [Айбулаттың] йәне әсене.* Һ. Дәүләтшина.

**2.** Кешегә хас булған үҙенсәлекле сифаттар, һыҙаттар; кешенең тәбиғәте, холko. *Изге йәнле кеше.* / Кешене һәм башка тереклекте белдергән һүҙҙәр менән *-ле* ялғауында килеп, шулар өсөн өҙөлөп торғанды белдерә. *Ат йәнле кеше. Бала йәнле кеше.* / Берәй төрлө үҙенсәлекле тәбиғәтле, холоkло кеше тураһында. *Түбән йән. Һатлык йән.*

**3.** Кеше һәм башка тереклектәрҙең йәшәүе, ғүмере. *Йән аямау. Йәнде йәлләү.* ■ *Йән кәҙерле шул! Куянға ла кәҙерле үҙ йәне.* Ш. Бабич. **Йән аҫрау** тереклек һаклау, йәшәү. *Йәй булһа, бер хәл: сейә, еләк, кыр емеше менән булһа ла йән аҫрайһың.* Т. Хәйбуллин.

**4.** Кем дә булһа берәү. *Уралкайҙан бейек ай тау булмаҫ, Уралкайҙы һөймәҫ тә йән булмаҫ* (Халык йырынан). / Кеше һанын иҫәпләү берәмеге. *Бергә ашап-эсеп, бергә ятып, беҙ торабыҙ йортта туғыҙ йән.* Х. Ғәбитов. **Йән әҫәре** (*йәки* **ишараты**) бер бөртөк йән эйәһе. *Ауыл тын. Урамда йән әҫәре күренмәй.* Б. Хәсән.

**5.** *с. мәғ. күсм.* Иң якын. *Йән дуҫ. Йән кәрҙәш. Йән серҙәш.* ■ *Атайым да тиһәм, уғым аҙ; сабайым да тиһәм, алдым һаҙ; ян-яктарыма ла ай караһам, йән юлдашкайҙарым минең аҙ.* Салауат Юлаев. *Һандуғаскай һайраһана, йән һылыуым һаумы икән* (Халык йырынан).

**6.** *эйл. ф.* **йәнем** *һөйл.* Иркәләгәндә әйтелә. *[Түрәбай:] Гөлкәй, йәнем, зинһар этләнмә!* Т. Хәйбуллин.

◆ **Йән алғыс** бер нәмәне ай-вайға куймай ныкыткан кешегә әйтелә. **Йән алкымға килеү** ауыр хәл-кисерештең һуңғы сигенә етеү; үлә яҙыу. *Йөрәк һуға, ауыҙ кибә, һыу юк. Йән алкымға килә. Пуляһыҙ-ниһеҙ үлем көтөлә.* Д. Юлтый. *Анау яурынына ука баҫкандары килгән сакта, төптө йәнең алкымыңа килә торғайны.* Ғ. Дәүләтшин. **Йән атыу** 1) бик нык теләү; елкенеү.— *Кеше менән һөйләшергә йән атып тора инде ул [Нигмәт].* К. Аралбаев; 2) бөтә күңелде биреү; өҙәләнеү.— *Мөтәй ҙә Мөтәй тип йән атаһың, уның ни ере Тимергәленән артык?* Ф. Иҫәнғолов. **Йән белмәү** иҫ белмәү, иҫһеҙ булыу. *Йән белмәй ятыу.* ■ *Барыһы ла йән белмәй йоклай.* Ғ. Дәүләтшин. **Йән биреү** 1) донъяға ятыу; 2) үлеү. *Көрәштә кан биргән, йән биргән был ерҙең баһадир улдары.* Б. Ишемғол. **Йән бөркөү** йәм өҫтәү. *Әсмә кайтып, өй эсенә йән бөрктө.* **Йәнде алыу** 1) үлтереү; 2) бик нык әрләү; кәрәкте биреү. *Берүк мин әйтте тип әйтмә, йәнемде алырҙар.* **Йәнде биреү** 1) башты корбан итеү; үлеү. *[Бай — батшаға:] Һинең өсөн .. йәнемде бирергә ризамын* (Әкиәттән); 2) бөтә күңелде, көстө һалыу. **Йәнде кулға тотоп** (*йәки* **алып**) нык куркып. *Шофёр иҫерек, машинаны кыуа. Мин йәнемде кулға тотоп барам.* М. Хәй. **Йәнде кыйыу** ерле юкка үртәү. *Улай түгел дә, былай түгел тип йәнде кыя.* **Йәнде өҙөү** үлтереү. *Һауаға аткан уккайым карлуғаскай кошто үлтергәнсә, бер дошмандың йәнен өҙһәсе.* Салауат Юлаев. **Йәнде ус төбөндә тотоп** *кар.* **йәнде кулға тотоп. Йәнде фиҙа итеү** (*йәки* **кылыу**) һис ни менән иҫәпләшмәй, үҙенде тотош бағышлау. *Эшкә йәнде фиҙа итеү.* **Йәндәй күреү** бик якын, бик кәҙерле күреү. *Һары ла сәсең үрермен дә, һине йәндәй күрермен* (Халык йырынан). **Йәндән артык** бик кәҙерле, бик якын. *Йәндән артык күреү.* ■ *Аһ! Шул күҙҙәр миңә йәндән артык, бәхет табам карап тороштан.* Ш. Бабич. **Йән дә тән** *шул уk* **йән көскә** (*кар.* көс). *Йән дә тән эшләү.* **Йәне лә калмау** һау ере, бөтөн ере калмау. *Кулдәгемдең йәне лә калмаған.* **Йәнен куймау** (*йәки* **калдырмау**) һау ерен, бөтөн ерен калдырмау. **Йәнеңде кайҙа куйырға белмәү** куркып, ни эшләргә белмәү. **Йән ер** ирҙәрҙең йоморткалығы. **Йәне юk** 1) иҫе юk, моңһоҙ. *[Ғүмәр ағай:] Һаман йоклай! Беҙҙең Әхмүштең йәне юктыр.* Д. Юлтый; 2) кешене йәлләр бәғере юk; каты бәғерле. **Йән кибеү** нык йонсоп, сараһыҙ сиккә етеү. *Бер нисә йыл рәттән королок була. .. Мал кырыла, кешеләрҙең йәне кибә.* Ә. Вахитов. **Йән киҫәге** кәҙерле, һөйөклө. *Йән киҫәгем, алтыным тинем һине, һөйҙөм һине.* Т. Йәнәби. **Йән куйыу** үлеү. *Дейеү кот оскос үкереп, шул урында йән куйған.* «Куҙыйкүрпәс менән Маянһылыу». **Йән(де) кыйыу** 1) үлтереү. *[Нәркәс:] Атай, мине бала итһәң, уның канын ағыҙма. Бағауылһыҙ егеттең йәнен кыйып дан алма.* «Акбуҙат»; 2) кешене яфалау, үртәндереү.— *Исмаһам, мырҙам, һин йәнде кыйма, йәме,— тине ағайым.* Ғ. Вәлиев. **Йән өҙгөс** *кар.* **өҙгөс** [1]. *Йән өҙгөс тауыш менән кыскырыу.* **Йән өрөү** 1) хәл индереү, терелтеү. Тәбиғәткә йән өрөү; 2) күтәренкелек, йәнлелек биреү. *Буранбайҙың хәбәре иптәштәренә йән өрҙө.* Д. Юлтый. **Йән өшөү** *кар.* **өшөү** 3. **Йән сығыу** үлеү. *Һинең менән даным сыкты, йәнем сыкһын куйыныңда* (Халык йырынан). **Йән талашыу** үлемесле булыу. *Атылған иптәштәр йән талашып ятканда ла: «Йәшәһен пролетариат революцияһы!» — тип кыскырып корбан булдылар.* И. Көҫәпкол. **Йән тапшырыу** үлеү. *Дошман кулынан йән тапшырып [Бабсак батыр] ятты шулай.* «Бабсак менән Күсәк». **Йән терәге** тормошта арка терәге булырлык кеше. *«Йән терәгең кем? — тип һорағанда, «йән терәгем фәлән кеше»,— тип яуап бирәләр.* Т. Морат. **Йән тир** каты көсөргәнештән булған арманһыҙ хәл; кара тир. *Йән тиргә төшөү. Йән тир сығыу.* ■ *Юлы таулы, сокор-сакыр, кайта-кайта аттың йән ти-*

*рен һыға торған.* М. Тажи. *Бер ял итәм, бер бысам, үҙем йән тиргә төшәм.* Ф. Рәхимғолова. **Йән һуйғыс** аяуһыҙ йолҡҡос. *Йән һуйғыс әҙәм.* **Йән эйәһе** кеше һәм бөтә тереклек. *Бөгөн ҡояш сығыу менән ҡулына салғы тоторҙай бөтә йән эйәһе туғайға ағылды.* И. Насыри. *Өйҙә ҡараңғы. Етмәһә бер йән эйәһе юҡ.* Ф. Рәхимғолова. **Ни йәнең [менән]** бәғерһеҙлек, моңһоҙлоҡҡа ҡарата әсенеп әйткәндә ҡулланыла. *Ни йәнең барып һуҡтың? Ни йәнең тарта?* **Себендәй йән** кешене бәләкәйләтеп әйткәндә ҡулланыла. *Себендәй йәнде һаҡлау.* **Сыкмаған йән** астан, ауырыуҙан үлер сиккә етеп ябыҡҡан кешегә ҡарата әйтелә. **Эсендә йәне юҡтыр** бәғерһеҙ йәки моңһоҙ кешегә ҡарата әйтелә. *Эсендә йәне юҡтыр бының — төшкә саҡлы йоҡлап ята.* **Эт йәнле** *ҡар.* **эт.**

● *Ир бирмәк — йән бирмәк.* Әйтем. *Итсегә ит ҡайғыһы, кәзәгә йән ҡайғыһы.* Әйтем. *Йән биргәнгә йүн биргән.* Әйтем. *Кәмәгә менгәндең йәне ус төбөндә.* Әйтем. *Ҡара кешенең тире сыҡҡансы, һары кешенең йәне сығыр.* Әйтем. *Үткер ҡылыс — ҡынға көс, үтмәҫ ҡылыс — йәнгә көс.* Әйтем. *Яҡшы һүҙ — йән аҙығы, яман һүҙ баш ҡаҙығы.* Әйтем.

**ЙӘНАСЫҒЫНА** *р. ҡар.* **йәнәсыҡҡа.**

**ЙӘНЕП** [*гәр.*] *и. иҫк.* Бер яҡ, тараф. *Мөмкин булманы ул тарлыҡ хәлендә халайыҡтарҙы өндәп, нәсихәтләп, үҙ йәнебемә алырға.* «Батыршаның хаты».

**ЙӘНКӘЙ** *и.* Яратып, иркәләп әйткәндә ҡулланыла. *Әйтмә, йәнкәй, ауыр һүҙ, хәтеремде ҡалдырыр* (Халыҡ йырынан).

**ЙӘНКӘЙ-ЙӘНӘШ** *и.* Яратҡан, һөйгән кеше; йәр. *Йәнкәй-йәнәш китте ай һунарға, Ашҡаҙарҡай буйына шәшкегә* (Халыҡ йырынан).

**ЙӘНКӘШ** *и.* Яратҡан, һөйгән кеше, йәр. *Аягүрә төштәр күрәм һин йәнкәште һағынып* (Халыҡ йырынан).

**ЙӘНЛЕ** *с.* **1.** *ҡар.* **тере 1.** *Иртә менән йәнле әҙәм ҡалмаған кеүек тыныс яткан ауыл кис менән гөжләп китте.* Һ. Дәүләтшина. *Гүрстандай гәмле ауылдарҙа ҡыбырлаша йәнле мәйеттәр.* Ш. Бабич.

**2.** Хайуандар йәки үҫемлектәр донъяһына ҡараған. *Йәнле тәбиғәт.*

**3.** Тасуирлы, образлы. *Йәнле һөйләү теле.* Йәнле агитация. ■ *Ул [Рим] үҙе йыш ҡына Бануға шул яңылыҡтың йәнле кәүҙәләнеше булып тойола ине.* Ә. Вәли.

**4.** Хәрәкәткә тулы, шаулап торған. *Тын ҡулдәргә төшкән аҡҡошмо ни, уйһыуҙарҙа ята аҡ томан. Ниндәй йәнле иртә! Быны бер саҡ, тау биттәрен солғап яҡтыға, ҡояш сыға башлай, нурҙарына йым-йым итә Урал таштары.* Ғ. Сәләм.

**5.** Күмәк кеше ҡатнашлығында бик интенсив барған, ҡыҙыҡлы һәм күңелле булған (эш-хәлгә, төрлө ваҡиғаға ҡарата). *Ирҙәр ағы йәнле әңгәмәгә әйләнде. Ҡотлояр һаман да ҡыҫҡырып һөйләне.* Һ. Дәүләтшина. // *Сәғиҙә .. дәресте нисек кенә булһа ла күңеллерәк, йәнлерәк үткәрергә тырышты.* М. Тажи.

**ЙӘНЛЕК** *и.* Өйҙәге эт, бесәй һәм ҡырҙағы бөтә булған һөтимәр, йән эйәһе. *Ваҡ йәнлек. Йыртҡыс йәнлек. Өй йәнлектәре. Ҡыр йәнлектәре. Йәнлек тиреһе. Йәнлек һуҡмағы.* ■ *Хәҙер урман да йылдан-йылға һирәгәйә, йәнлектәр, ҡоштар ҙа кәмей бара.* М. Тажи. *Яҙ, йәй, көҙ буйы урман эсендә мыжғып, көнө-төнө ятып тынмай торған йәнлектәрҙең береһе лә был матур тынлыҡты боҙмай.* Ғ. Дәүләтшин.

**ЙӘНЛЕКСЕ** *и.* Йәнлек аулаусы; һунарсы.

**ЙӘНЛЕЛЕК** *и.* **1.** Төрлө эшкә бәйле шау-шыу, хәрәкәт. *Киске йәнлелек, мәж килеп тора ауыл урамы, көтөүҙән малдар ҡайта уйнатып саң бураны.* Ғ. Байбурин.

**2.** Тормошҡа хас тулылыҡ, тәбиғилек. *Бала беҙҙең тормошҡа тағы ла матурлыҡ бирҙе, өйгә тағы ла тулылыҡ, йәнлелек керетте.* М. Ғафури. *Романдың икенсе яртыһында сюжет үҙенең .. үҫтерелеше менән әҫәргә йәнлелек, билдәле драматизм биргән.* Ә. Харисов.

**ЙӘНЛӘНДЕРЕҮ** *ҡ.* Йәнле итеү. *Эште йәнләндереү.* ■ *Йуҡәнән бал йыйып ҡалһын өсөн ҡорттарҙы йәнләндереү маҡсатында өҫтәп ашатырға кәрәк.*

**ЙӘНЛӘНЕҮ** *ҡ.* **1.** Йәнлегә әйләнеү, йәнле булыу. *Йәнләнде ауыл, ҡала, урмандар, ә йөрәктә — байрам шатлығы.* Н. Нәжми. *Яратам, яҙ, күкрәп килеүеңде, йәнләнәләр һинән бар йыһан.* Р. Ғарипов.

**2.** Күңелле төҫ алыу; күңелләнеү. *Сәғүрә еңгә балаларса ҡыуанып, йәнләнеп китте.* «Ағиҙел», 1964, № 8.

**ЙӘННӘТ** [*гәр.*] *и.* **1.** Дини ҡарашса, гөнаһһыҙ кешеләр үлгәндән һуң бара торған икенсе рәхәт донъя; ожмах. *Йәннәткә инеү.* ■ *Күрәм ҡарттарҙы: улар көтәләр алда йәннәттәр, наҙлы ниғмәттәр.* М. Ғафури. *Хоҙай бирер йәннәттән туғайы һылыу Урал тау* (Ҡобайырҙан). **Урынын йәннәттә ҡылһын** үлгән кешегә әйтелә торған теләк.

**2.** *күсм.* Рәхәт, матур тормош йәки урын.— *Хәҙер донъя йәннәт бит ул, уландар.* Н. Мусин. **Донъя йәннәте** донъялыҡтағы рәхәт тормош йәки урын. *Яҡ-ягымда еҫле гөлдәр — был бит донъя йәннәте.* Ғ. Хәйри. **Йәнең йәннәттә булһын** яҡшы теләк итеп әйткәндә ҡулланыла. **Йәннәт күлдәге** *шул уҡ* **ожмах күлдәге** (*ҡар.* **күлдәк**).

**ЙӘНСЕК** *с.* Йәнселгән; йәмшек. *Йәнсек самауыр.*

**ЙӘНСЕЛЕҮ** *ҡ. төш. ҡар.* **йәнсеү.** *Һул ҡулда йәнселеп бөткән ҡалай түбәле таш амбар.* А. Карнай.

**ЙӘНСЕҮ** *ҡ.* **1.** Баҫып, ҡыҫып, һуғып, рәүешен боҙоу; йәмшәйтеү. *Тимерҙе йәнсеү.* ■ *Иләп кенә өйөрөп сап шулай, йөҙөн йәнсеп ҡуйма салғыңдың.* Р. Ғарипов.

**2.** Баҫып, тапап иҙеү, емереү. *Танк йәнсеп үткән өй янында төтәй һуңғы ҡаҙыҡ.* М. Кәрим. *[Хәйруллин:] Егеттәр, иҙегеҙ дошманды, йәнсегеҙ, сигенмәгеҙ.* Ә. Ихсан.

**3.** *күсм.* Рәнйетеү, әрнетеү. *Йөрәгемде йәнсеп ҡуҙ яна — күңел түрендәге шул бала.* К. Кинйәбулатова.

**ЙӘНТ** *и. диал.* Тырышлыҡ, хәстәрлек.

□ **Йәнт итеү** тырышыу, хәстәрләү.

● *Йәнт иткән йәр табыр.* Әйтем. *Йәнт итмәгән тапмаған.* Әйтем.

**ЙӘН-ТӘН** *и. йыйн.* Бөтә булмыш. *Йәнде-тәнде аямау. Йән-тән биреп эшләү. Йәне-тәне менән каршы. Йәне-тәне менән риза. Йән-тән менән бирелеү. Йән-тән менән яратыу.* ■ *Рәшит Нигмәти бөтә тәбигәте, йәне-тәне менән шагир ине.* С. Кулибай.

**ЙӘНТӘСЛИМ** [*фарс.*] *р.* Бөтә көс менән, йән көскә. *Йәнтәслимгә йүгереү. Йәнтәслим эшләү.* ■ *Эй, батыр ир, батыр ир, .. һугышканһың йәнтәслим* (Ҡобайырҙан). *[Егет] йәнтәслим килеп, дейеүҙең өҫтөнә менеп киткән* (Әкиәттән).

**ЙӘНТӘСТЕМ** [*фарс.*] *р. диал.* Йәнтәслим.

**ЙӘНТЕҮ** *к. диал.* Тырышыу, хәстәрләү.

**ЙӘНҮБ** [*гәр.*] *и. иҫк.* Көньяҡ. *Йәнүбтең коштары ла, диңгеҙҙән иҫкән ел дә, .. көлөп торган Ҡырым кояшы ла — барыһы ла, барыһы ла уның һүҙҙәрен тыңлай.* И. Насыри.

**ЙӘНҮБИ** [*гәр.*] *с. иҫк.* Көньяҡта урынлашҡан, көньяҡтағы. *Йәнүби илдәр.* ■ *Йәнүби группа ла Кронштадт крепосына килеп, атакага әҙерләнгән.* Ш. Хоҙайбирҙин.

**ЙӘНҮР** *и. диал.* Ағас ҡорто.

**ЙӘНФАРМАН** [*фарс.*] *р.* Бөтә көс менән, йән көскә (хәрәкәт итеп). *Йәнфарманга йүгереү. Йәнфарман сабып килеү.* ■ *Немецтарҙың иҫән калгандары йәнфарман касты.* С. Кулибай.

**ЙӘНҺЕҘ** *с.* **1.** Йәне юҡ, тере түгел. *Йәнһеҙ нәмә.* ■ *Баяр уның [Айбулаттың] эргәһенән йәнһеҙ бер багана янынан үткән һымаҡ үтте.* Һ. Дәүләтшина.

**2.** Хайуан һәм үҫемлектәр донъяһына ҡарамаған. *Йәнһеҙ тәбигәт.*

**3.** Дәртһеҙ, илһамһыҙ, һүлпән. *Ылымыҡ һымаҡ йәнһеҙ йәндәрҙең дошманы ла, дуҫы ла юк.* Ғ. Хөсәйенов.

**4.** *күсм.* Ҡыҙыҡһыҙ, һүлпән. *Йәнһеҙ тормош.*

**5.** *күсм.* Аяуһыҙ, ҡанһыҙ. *Йәнһеҙ кеше.*

**ЙӘНҺЕҘЛӘНЕҮ** *к.* Аяуһыҙға әйләнеү, ҡанһыҙланыу; йәнһерәү.

**ЙӘНҺЕРӘҮ** *к. кар.* **йәнһеҙләнеү.** *[Катил:] Канһыраган икән был, йәнһерәгән икән был. Һарайымды күтәргән үгеҙемде килтерең, үгеҙ кылыр кылыкты.* «Урал батыр».

**ЙӘНҺӘР** *с. кар.* **йәнһеҙ** 1. *Кайныһы үлгән, кайныһы сала йәнһәр булып ята.* Х. Ғәбитов.

**ЙӘНШИШМӘ** [*фарс.*] *и.* Әкиәттәге тереклек шишмәһе. *[Урал:] Йәншишмәнең бар һыуын һоҫоп алып киләйек, бар кешегә бирәйек.* «Урал батыр».

**ЙӘНӘ** *р.* **1.** Яңынан, ҡабаттан. *Сык, йәнем, төн зинданынан, куккә ос, йәмләп йәнә.* Ш. Бабич. *Тауҙан сылтырап шишмә сыга, ти. Уның һыуы бер аҙ ер агып бара ла, йәнә ер аҫтына инеп югала, ти* (Әкиәттән).

**2.** Өҫтәмә рәүештә, тағы ла. *Көн йүгергән, төн йүгергән [Һыңараяҡ], йәнә бер көн йүгерәһе калган* (Әкиәттән). *Ҡарт ул итте бер генә һогонган да: «Йәнә бир!» — тигән, ти* (Әкиәттән). *Һыу юлы хеҙмәтсәндәренең ауылдарга таралып бөтөүе эште йәнә лә кыйынлаштырҙы.* «Совет Башҡортостанының ун йылы», 1929.

**3.** *йыйн. терк. мәг.* Һәм, тағы. *Тау батыр, Урман батыр йәнә Угатар батыр — өсәүләп донъя ҡыҙырып йөрөй, ти* (Әкиәттән). *[Дейеү:] Тегендә әле минең алты башлы йәнә ике башлы ике ҡустым бар* (Әкиәттән). / Шулай уҡ, һәм дә. *Йәнә һәр кем тәкәббер булһа, мактансык булһа, донъяла хурлык күрмәй китмәҫ.* М. Өмөтбаев.

**ЙӘНӘП** [*гәр.*] *и. иҫк.* Әфәнде. **Ғәли йәнәптәре** революцияға тиклемге Россияла синфи айырмаһы булған юғары дәрәжә кешеләрен ололау һүҙе; бөйөк әфәнде. *Ул сакта Лотфулла батша гәли йәнәптәре өсөн һугышыуҙан башканы белмәй ине.* И. Ниғмәтуллин.

**ЙӘНӘСЫҠҠА** *р.* **1.** Бөтә көстө һалып, бөтә көс менән. *Йәнәсыкка һугып ебәреү.* ■ *— Ашлыкты харап иттеләр бит! — тип [Миһран] йәнәсыкка кыскырҙы ла ферма йортона йүгерҙе.* Ш. Насыров.

**2.** Сиктән тыш, бигерәк. *Йәнәсыкка ауыр. Йәнәсыкка күп.* ■ *Байып барган кояш нурында баланың былай ҙа һары йөҙө йәнәсыкка һары булып күренә.* «Ағиҙел», 1968, № 12.

**ЙӘНӘҮЕЛГӘ** *р. диал.* Йәнәсыҡҡа. *Өйҙә тәгәм ризык юк. Күмәк инек бит йәнәүелгә.* Я. Вәлиев.

**ЙӘНӘҺЕ** *инш.* Кешенең ҡылығынан йәки һүҙенән бер мәғәнә сығарып, шуны мыҫҡыллаған һымағыраҡ итеп һөйләгәндә ҡулланыла. *Төш кайтканда, [Костя] йүгәндәрен беҙҙең һымак аркаһына һалып, ҙур кәнәгәтлек менән атлай. Йәнәһе, ул да иген игә.* Р. Низамов. *Журналистың эшен бик анһат уйлайҙар: бара ла яҙа ла кайта, йәнәһе.* Р. Солтангәрәев.

**ЙӘНӘШ** [1] *и.* Һөйгән йәр. *Йәнәшемде оҙатканда яулыктарым болганым* (Халыҡ йырынан).

**ЙӘНӘШ** [2] *р.* **1.** Берәй кеше йәки нәмә менән бер рәттән, йәнәшә, ҡатар. *Йәнәш атлау.* ■ *[Әклимә:] Талга кунган пар һандугас кеүек йәнәш кенә ултырһындар. Икеһе лә нindәй һөйкөмлө!* Ҡ. Даян. *Командир атлыларга юл катыһынан сыкмаҫка, икәүҙән артык йәнәш бармаҫка, артта калмаҫка бойорҙо.* Ә. Вахитов.

**2.** *с. мәг.* Ниҙең дә булһа янындағы, рәттән торған; ҡатар. *Беҙҙең командалагы егеттәр йәнәш ике вагонга урынлашты.* С. Кулибай.

**ЙӘНӘШКӘ** *р.* Кем йәки ни менәндер йәнәш ергә, кем йәки ниҙеңдер янына; йәнәшәгә, ҡатарға, эргәгә. *Йәнәшкә ултырыу.*

**ЙӘНӘШЛӘП** *р. кар.* **йәнәш** [2] 1. *Ерән бейә .. Мөхәмәтулла бабай менән йәнәшләп килә.* Ә. Вахитов.

**ЙӘНӘШЛӘШЕҮ** *к.* Йәнәш [2] (1 мәғ.) урынлашыу; ҡатарлашыу. *[Салауат] Билал менән йәнәшләште.* А. Таһиров.

**ЙӘНӘШМӘ** *и. диал.* Сана үрәсәһе.

**ЙӘНӘШТӘ** *р.* Кем йәки ни менәндер йәнәш ерҙә, кем йәки ниҙеңдер янында; йәнәшәлә, ҡатарҙа, эргәлә. *Йәнәштә тороу.* ■ *Ғәлинур беҙҙең йәнәштә рәхәтләнеп балык тыпылдата.* Ф. Иҫәнғолов.

**ЙӘНӘШТӘГЕ** *с.* Кем йәки ниҙеңдер янында, йәнәшендә булған, йәнәштә булған. *Йәнәштәге өй.* ■ *Миндә батыргыс булып сыкты. Йәнәштәге бер агай уга [Ғәлинурга] сумкаһынан кыуал сыгарып бирҙе.* Ф. Иҫәнғолов.

**ЙӘНӘШТӘН** *р.* **1.** Кем йәки нәмәгәлер йәнәш ерҙән, кем йәки нәмәнеңдер янынан. *Йәнәштән урын алыу.*

**2.** Бер рәттән, йәнәш ҡуйып. *Ватан! Ошо бер һүҙ канибыҙға әсә һөтө менән һеңешкән. Ғәҙәтләндек әйтеп ватан һүҙен әсә һүҙе менән йәнәштән.* Т. Морат.

**ЙӘНӘШӘ** *р. кар.* **йәнәш**[2].

**ЙӘНӘШӘГӘ** *р. кар.* **йәнәшкә.**

**ЙӘНӘШӘЛЕК** *и.* Эйәреүсе һүҙҙең эйәртеүсе һүҙгә грамматик йәһәттән түгел, мәғәнә йәһәтенән генә бәйләнеше (мәҫ. ҡала баҡсаһы, хушлашыу кисәһе, ял йорто).

**ЙӘНӘШӘЛӘ** *р. кар.* **йәнәштә.** *Бына бит донъяла ниндәй изге күңелле кешеләр була! .. Ә һин улар менән йәнәшәлә йәшәйһең, хатта уларҙың шундай икәнен белмәй ҙә үлеп китәһең. .. Һай, был игтибарһыҙлыҡ!* З. Биишева.

**ЙӘНӘШӘЛӘГЕ** *с. кар.* **йәнәштәге.** *Ҡадир .. йәнәшәләге бәләкәй капканан перронга уҙҙы, Фатима ла уның артынан эйәрҙе.* Б. Бикбай.

**ЙӘНӘШӘЛӘШЕҮ** *к. кар.* **йәнәшләшеү.**

**ЙӘНӘШӘНӘН** *р. кар.* **йәнәштән.**

**ЙӘП**[1] *и.* **1.** Осо тармаҡланып торған нәмәнең бер айырсаһы; сата. *Һәнәк йәбе. Өс йәпле суртан кармагы.*

**2.** Бер нисә бысаҡлы бәкенең бер бысағы. *Ике йәпле бәке.*

● *Һабы килһә, йәбе килмәй; йәбе килһә, һабы килмәй.* Мәҡәл.

**ЙӘП**[2] I *и.* Урын-еренә килеп, килешеп торған бер хәл. ■ *Мин йылымды үҙ йәбе менән генә һауып сыгарып, яр башындагы аҡланга йәйеп һалдым.* Ф. Иҫәнғолов.

II *с.* Урын-еренә килеп, килешеп торған; уңай, ыңғай. *Йәп булыу. Йәп килеү. Йәп төшөү.*

**ЙӘП**[3] *киҫ.* Йә-ижеге менән башланған төп сифат һәм рәүешкә ҡушылып, артыҡлыҡ дәрәжәһе бирә. *Йәп-йәтеш. Йәп-йәш. Йәп-йәшел.*

**ЙӘПЛЕ** *с.* **1.** Тотоноу, файҙаланыуға уңайлы; йәтеш. *Балтаның һабы йәпле. Йәпле итеп яһау.* ■ *Фатирың йәпле генә икән.* М. Тажи.

**2.** Урын-еренә килешле; йәтеш. *Ҡапҡа баганаһына йәпле агас. // Бүрәнә йәпле ятты.*

**ЙӘПЛӘНЕҮ** *к.* **1.** *төш. кар.* **йәпләү**[2] **2.** *Ирҙәрҙең башында өҫ ягы кейеҙҙән йәпләнгән кейеҙ кәпәс.* С. Кулибай.

**2.** *кайт. кар.* **йәпләү**[2] **1.** *Йәпләнеп ятыу.*

**ЙӘПЛӘҮ**[1] *к.* Йәп ҡуйыу, сата яһау.

● *Һәнәге кыйбат түгел, йәпләгәс кыйбатлана.* Әйтем.

**ЙӘПЛӘҮ**[2] *к.* **1.** Уңайлы, йәтеш итеү; ҡулайлау. *Йәпләп ултыртыу.* ■ *Бабай куҙлеген йәпләп куйҙы ла йылмая биреп һөйләргә кереште.* Р. Солтангәрәев.

**2.** Урын-еренә килтереү, йәтешләп ҡуйыу; ҡулайлаштырыу. *Атайыма окшатыбыраҡ тубыкландым. Мылтыкты йәпләй башланым.* Ә. Зәйнуллин.

**3.** *диал. кар.* **йөкмәү**[1] 1.

**ЙӘПЛӘШЕҮ** *к.* Үҙ-ара йәтеш кенә тап килеү. *Тоташтырып караһалар, уктың ике яртыһы йәпләшеп тора, ти.* «Бабсаҡ менән Күсәк».

**ЙӘПЛӘШТЕРЕҮ** *к.* Үҙ-ара йәтеш кенә итеп тап килтереү. *Йәпләштереп эшләү.*

**ЙӘПРӘЙ**[1] *с.* Йәпрәйеп торған. *Тирмә ишеге асылды. .. Йәпрәй кашлы бер карт күренде.* Ш. Шәһәр.

**ЙӘПРӘЙ**[2] *и. диал.* Бала итәк, ҡатмар.

**ЙӘПРӘЙЕҮ** *к.* Боҙолоп, йәмшәйеп, аҫҡа һалбырау. *Ҡашы йәпрәйеп төшкән.* ■ *Бабай йәпрәйгән калпагы аҫтынан кыҙҙар ягына боролоп караны.* Һ. Дәүләтшина.

**ЙӘПРӘЙТЕҮ** *к.* Боҙоп, йәмшәйтеп, аҫҡа һалбыратыу. *Ҡашты йәпрәйтеү.*

**ЙӘПТӘШ** *с. диал.* Килешле, йәтеш. *«Перовский» Сынбулатовтың кәүҙәһенә йәптәш көй булып сыкты.* М. Тажи.

**ЙӘПҺЕҘ** *с.* **1.** Тотоноу, ҡулланыу өсөн уңайһыҙ; йәтешһеҙ. *Йәпһеҙ көрәк. // Йәпһеҙ эшләү. Һәнәктең һабы йәпһеҙ эшләнгән.*

**2.** Урын-ере, торошо йәтешһеҙ; уңайһыҙ. *// Йәпһеҙ ултырыу. Йәпһеҙ ятыу.*

**3.** *күсм.* Күңелгә ятышһыҙ; уңайһыҙ. *Үҙеңә килгән кунакты кешегә ебәреү йәпһеҙ инде.* М. Тажи.

**ЙӘПӘКӘЙЛӘНЕҮ** *к. диал.* Ярамһаҡланыу, юхаланыу. *Кешегә йәпәкәйләнеү.*

**ЙӘПӘКӘЙЛӘҮ** *к. диал.* Юхалау. *Йәпәкәйләп һорау.*

**ЙӘПӘТӘЙ** *с. диал.* Ярамһаҡ.

**ЙӘР** [*фарс.*] *и.* Күңел һөйгән, ғишыҡ уятҡан кеше. *Йәр һөйөү.* ■ *[Шәүрә:] Бары хәтерем калды: ташланган йәр — канаттары һынган аккош ул! [Акмырҙа:] Мин бит ташламаным.* Б. Бикбай. *Йәрең менән айырым булганда ла, йән бер икән, шул йәренде ятка калдырганса йән бир икән.* Н. Хәбиров. *Йән рәхәте һөйгән йәр менән* (Халыҡ йырынан).

**ЙӘРЕНГӘ** *р. кар.* **йәрингә.**

**ЙӘРЕҮ** *к. диал.* Йәлсеү.

**ЙӘРЕШ** *с. диал.* Иҫәр.

**ЙӘРИДӘ** [*гәр.*] *и. иҫк.* Газета. *Бындай урынһыҙ фекерҙәрҙе йәридә сәхифәләренә яҙып галәмгә изһар кылыуга ла ояттыр.* М. Ғафури.

**ЙӘРИНГӘ** *р.* Киләһе йылға. *[Урал:] Барыбер инәм мин ул училищега. Эйе! Быйыл булмаһа, йәрингә!* М. Хәйҙәров.

● *Быйылгы эште йәрингә калдырма.* Әйтем.

**ЙӘРИӘ** [*гәр.*] *и. иҫк.* **1.** Ҡол ҡатын; хеҙмәтсе ҡатын. *Намыҫлы егеттәр актык аҙыктарын ханга оҙатып, һөйгән кыҙҙарын хан һарайына йәриә итеп биреп, түрәләргә теҙ сүгеп, кол булып йәшәргә тейеш түгел.* Ш. Шәһәр.

**2.** Күңел һөйгән, ғишыҡ уятҡан ҡатын-ҡыҙ; һөйәркә.

**ЙӘРЛЕК** *и. кар.* **ярлыҡ.**

**ЙӘРМИНКӘ** [*рус.* ярмарка ⟨ *нем.*] *и.* Билдәле бер ваҡытта, билдәле бер урынға бөтә яҡтан йыйылған оло баҙар. *Көҙгө йәрминкә. Яҙгы йәрминкә. Кургәҙмәле йәрминкә. Өфө йәрминкәһе.* ■ *Йәрминкәгә бик куп вәкил килгән. Улар халыҡ талабы ҙур булган тауарҙы һайлап, шунда ук етештереүселәр менән алыш-биреш договоры төҙөй.* «Совет Башҡортостаны», 1982, 12 ғинуар.

**ЙӘРПЕС** *и. диал. кар.* **йәрпесәк**[2].

**ЙӘРПЕСӘК**[1] *и.* Ҡолаҡтың аҫҡы, кимерсәкһеҙ өлөшө; ҡолаҡ йомшағы.

**ЙӘРПЕСӘК**[2] *и.* Ҡыҙҙар күлдәгенең түшенә, еңенә бөрөп баҫҡан тар ғына ҡатмар. *Еңгә йәрпесәк куйып тегеү.*

**ЙӘРПЕСӘКЛӘҮ** *к.* Йәрпесәк [2] ҡуйыу. *Йәрпесәкләп тегеү.*

**ЙӘРСӘ** [*рус.* ярица] *и.* Яҙ сәсә торған арыш; яҙғы арыш.

♦ **Йәрсә баш** арышҡа оҡшаған үлән.

**ЙӘРӘБӘ** [*рус.* жребий] *и.* Ниҙер бүлешкәндә, ҡайҙалыр барәүҙе билдәләгәндә ғәҙел булһын өсөн араһынан берҙе тәүәккәлләп тартып ала торған ваҡ ҡына бер иш нәмәләр. *Йәрәбә алыу. Йәрәбә тартыу.* ■ *Ҡаралырға баргас, Хөсәйенгә беренсе йәрәбә сыкты. Ул аҙна ла торманы, Ташбаткандан бер үҙе хеҙмәткә китте.* Ж. Кейекбаев. *[Айыу:] Йәрәбә һалайыҡ. Йәрәбә кемгә сыкһа, арыҫланга шуны ашатырбыҙ* (Әкиәттән).

**ЙӘРӘБӘЛӘҮ** *к.* Йәрәбә һалыу. *Йәрәбәләп бүлеү.*

**ЙӘРӘХӘТ** [*ғәр.*] *и.* **1.** Тәндең йәки эске бер ағзаның ҡырҡылып, тишелеп, зыянланған урыны; яра. *Ҡылыс йәрәхәте. Уҡ йәрәхәте. Йәрәхәт һалыу. Йәрәхәтте бәйләү. Йәрәхәтте дауалау.* ■ *Минең күкрәктән автомат пуляһы үтеп киткән. Ҡыҙыулыҡ менән ярты сәгәт буйы мин ул йәрәхәтте һиҙмәгәнмен.* С. Кулибай.

**2.** *күсм.* Күңел рәнйеше. *Ауыр һүҙҙәр әйтеп, йөрәккә йәрәхәт һалыу.*

● *Тел йәрәхәте уҡ йәрәхәтенән яман.* Әйтем. *Яҡшы һүҙ йәнгә рәхәт, яман һүҙ йәнгә йәрәхәт.* Әйтем.

**ЙӘРӘХӘТЛӘНЕҮ** *к.* **1.** *төш. кар.* **йәрәхәтләү.** *Йәрәхәтләнгән ҡул. Йәрәхәтләнгән күңел.*

**2.** Йәрәхәт алыу. *[Урал батыр] тиңһеҙ алыштарҙың берееһендә йәрәхәтләнеп, канһырап ергә ауа* (Әкиәттән).

**ЙӘРӘХӘТЛӘҮ** *к.* **1.** Тәнде ни менәндер зыянлау, йәрәхәтле итеү; яралау. *Аяҡты йәрәхәтләү. Ҡулды йәрәхәтләү. Уны [һалдатты] Днепр йылғаһын кискәндә туп ярсығы йәрәхәтләй.*

**2.** *күсм.* Рәнйетеү. *Күңелде йәрәхәтләү.*

**ЙӘРӘШЕҮ** *к. диал. кар.* **килешеү** [3].

**ЙӘСАРӘТ** [*ғәр.*] *и. иҫк. кит.* Батырлыҡ, ҡыйыулыҡ.

□ **Йәсарәт итеү** баҙнат итеү, ҡыйыуланыу. *[Хәҙрәт] алдына барып рөхсәт һорарға йәсарәт итеү ҙә мөхәлдең береһе ине.* М. Ғафури.

**ЙӘСАРӘТЛӘНЕҮ** *к. иҫк. кит.* Баҙнат итеү, ҡыйыуланыу. *Һис бер инсан уға ҡаршы торорға йәсарәтләнмәҫ ине.* Аҡмулла.

**ЙӘСИҒ** *и. иҫк.* **1.** Киске шәфәҡ байыған ваҡыт. *Йәсиг үҙган, төн уртаһы яҡынлашкан.* Ш. Бабич.

**2.** (*йәки* **йәсиғ намаҙы**) Шул ваҡытта уҡыла торған намаҙ. *Ул [Рәхимә] бөгөн йәсиг намаҙын .. бисәләр булмәһенең мөйөшөндә бер үҙе уҡыны. Оҙаҡ итеп доға ҡылды.* Һ. Дәүләтшина.

**ЙӘСМИН** [*ғәр.*] *и.* Хуш еҫле аҡ сәскә ата торған ҡыуаҡ.

**ЙӘСТИҠ** *и. кар.* **йәсиғ.**

**ЙӘСТҮ** *и. кар.* **йәсиғ.**

**ЙӘТЕШ** *с.* **1.** Тотоноу, файҙаланыуға уңайлы; йәпле. *Йәтеш һәнәк.* ■ *[Бакса] балаларга йәтеш, үҙенә лә тыныс була.* Б. Бикбай. / Ҡуйыу, урынлаштырыу өсөн уңайлы; йәпле. *Йәтеш урын.* ■ *Юлдаш һыу өҫтөндә сусайып торған йәтеш кенә яҫмаҡ ташҡа барып ултырҙы.* З. Биишева.

**2.** Торош, килбәте килешле. // *Йәтеш ултырыу. Йәтеш килеп тороу. Буй-һынга йәтеш итеп тегелгән кейем.* ■ .. *Кәүҙәләре йәтеш тә, кашы ҡара, буйы зифа — ҡойоп ҡуйған карточка.* Ғ. Амантай.

**3.** Эш, хәлгә яйлы. ■ *Яланыраҡ яҡта, юлдағы карҙы ел осороп алып китеп торгас, йәтеш ине.* Н. Мусин. *Машина тура килеп йәтеш булды.* / Урыны, яйына килешле; ҡулай. // *Йәтеш уйлау. Боронголар әйтеп ҡалдырған бик йәтеш бер мәҡәл бар.* К. Мәргән. *Ихтыяж төшөп, йәтеш килгәндә, «иҫке» һүҙҙәрҙе ҡулланыуҙан тартынырга ярамай.* Ғ. Хөсәйенов.

**4.** Ҡатмарлы түгел, мәшәҡәтһеҙ; анһат. *Йәтеш тормош.* // *Йәтеште ҡарау. Йәтеш күренеү.* ■ *Әбей менән бабай йәтеш кенә итеп тороп яталар, ти* (Әкиәттән). *Хәҙер кеше йәтешкә сыгып алды. Утынды ла машина менән быса ла ҡуя.*

□ **Йәтеш итеү** кемдеңдер эшен яҡшы тип тапҡанда әйтелә; яҡшы итеү. *Уҡырга китеп йәтеш иткән.*

♦ **Йәтеш кеше** ығы-зығыһыҙ, мәшәҡәтһеҙ, анһат ҡына, ипле генә йөрөгән кеше. **Йәтеш тороу** әҙер тороу.

**ЙӘТЕШЛЕ** *с.* Йәтеш килгән, уңайлы. *Иртәнән бирле мылтығын тоҫкап, йәтешле минутты көтөп ултырған Байрас сирткескә ҡалай баҫҡанын һиҙмәй ҙә ҡалды.* З. Биишева.

**ЙӘТЕШЛӘНЕҮ** *к.* **1.** *төш. кар.* **йәтешләү** 2. *Йәтешләнгән урын.*

**2.** *ҡайт. кар.* **йәтешләү** 1. *Йәтешләп ултырыу. Һүҙ башларга йәтешләнеү.* ■ *[Тимербулат] мышкылдап иларга йәтешләнде.* Һ. Дәүләтшина.

**ЙӘТЕШЛӘҮ** *к.* **1.** Уңайы, яйына килтереү; килештереү. *Йәтешләп һүҙ башлау. Йәтешләп ултырыу. Йәтешләп бәйләү. Йәтешләп тотоу. Йәтешләп һалыу.* ■ *[Сурагол — Түрәбайга:] Ошо һыҙма мылтыкты йәтешләп ҡулыңа ал.* Т. Хәйбуллин.

**2.** Тейешле, әҙер хәлгә килтереү; әҙерләү. *Сәй йәтешләү.* ■ *Тимер карауатты индереп, Фәриҙәгә урын йәтешләй башланылар.* Р. Солтангәрәев.

**ЙӘТЕШҺЕҘ** *с.* Йәтеш килмәгән; килешһеҙ, уңайһыҙ. *Йәтешһеҙ урын.*

● *Ҡоро һүҙ ҡолаҡҡа йәтешһеҙ.* Мәҡәл.

**ЙӘТИМ** [*ғәр.*] *с.* **1.** Ата-инәһе йәки икеһенең береһе булмаған. *Йәтим бала. Йәтим ҡалыу.* ■ *Йәшләй йәтим үҫтем, ата йөҙөн, әсә мәрхәмәтен күрмәнем.* Ғ. Амантай.

**2.** *и. мәғ.* Ата-инәһе йәки икеһенең береһе булмаған бала. *Йәтимдәр йорто. Йәтим яҙмышы.* **Үкһеҙ йәтим** бөтөнләй ата-әсәһеҙ, шыпа йәтим.

● *Инәһе юҡ ҡыҙ йәтим, атаһы юҡ ул йәтим.* Әйтем. *Йәтимдең ауыҙы ашҡа тейһә, мороно ҡанар.* Әйтем. *Йәтим ҡатын елдән быуаҙыр.* Мәҡәл.

**ЙӘТИМ-ЕҺЕР** *и. йыйн.* Йәтим балалар.

**ЙӘТИМЛЕК** *и.* Йәтим хәле; йәтимселек. *Йәтимлектә үткән балалыҡ.* ■ — *Әсәйем үлгәс, был кәмһетеү янына йәтимлегемде мыҫҡыл итеү өҫтәлде.* С. Агиш.

**ЙӘТИМСЕЛЕК** *и. кар.* **йәтимлек.**

**ЙӘТИМҺЕРӘТЕҮ** *к.* Йәтим итеп ҡарау; йәтимһетеү, ситләтеү, тибеү. *[Айбулат — Гөл-*

*йөҙөмгә:] Илама. Балаларҙы якшы кара, йәтимһерәтмә.* Һ. Дәүләтшина.

**ЙӘТИМҺЕРӘҮ** *к.* Йәтимлектә йонсоп бойоғоу, үҙенде йәтим итеп һиҙеү; йәтимһеү.— *Башҡа балалар атаһына иркәләнгәндә, уның да минең алға ултырып иркәләнгеһе, һөйҙөргөһө килер. Шуның өсөн минең исемдән тағы бер үп, ҡосаҡла. Ул йәтимһерәмәһен.* Б. Хәсән. / *күсм.* Ташландыҡ, буш, күңелһеҙ хәлдә булыу. *Байгилдин тәҙрә ҡапҡастары бикләнеп, йәтимһерәп ултырған бер өйҙө күрһәтте.* Х. Ғиләжев.

**ЙӘТИМҺЕТЕҮ** *к. ҡар.* **йәтимһерәтеү.**

**ЙӘТИМҺЕҮ** *к. ҡар.* **йәтимһерәү.**

**ЙӘТИМӘ** [*ғәр.*] *и.* Йәтим ҡыҙ. *Шул ҡыҙ үҙе гәжәп матур булған, үҙе матур, үҙе йәтимә.* Х. Ҡунаҡбай.

**ЙӘТИМӘК** *с.* Йәтим ҡалған (мал йәки ҡош-ҡорт балаһына ҡарата). *Йәтимәк бәрәс.* ■ — *Бисара, йөрөй шунда тоҙға эйәләшкән йәтимәк быҙау шикелле.* З. Биишева.

**ЙӘТИНКЕ** *с. диал. ҡар.* **сәүек** 1. *Йәтинке эт.*

**ЙӘТМӘ** [1] *и.* Яны менән сиртеп ҡыҫа торған ҡорал (ваҡ йәнлеккә, ҡуянға ҡуйыла).

**ЙӘТМӘ** [2] *и.* **1.** Тоҡ рәүешендәге ваҡ ау йәки йылымдың тоғо. *Балыҡ йәтмәһе. Йәтмә ҡороу.* ■ *Йәтмәгә эләккән аҡ сабаҡтар һикерешә.* З. Әхмәтов. *Себен аулар өсөн үрмәксе тын мөйөштә йәтмә үрмәксе.* Ш. Виҡкол.

**2.** *күсм.* Кешене алдар өсөн эшләгән хәйлә. *[Рогаткин:] Корниловтар ни тикле генә йәтмә ҡорһа ла халыҡ беҙҙең яҡта.* В. Исхаков.

**ЙӘТМӘ** [3] *и. диал.* Ейәк.

**ЙӘТМӘ** [4] *и. диал.* Йәтсә.

**ЙӘТМӘЛӘҮ** [1] *к.* Йәтмә [1] ҡороу. *Ҡуянды йәтмәләп тотоу.*

**ЙӘТМӘЛӘҮ** [2] *к.* Йәтмә [2] (1 мәғ.) ҡороу. *Балыҡты йәтмәләп тотоу.*

**ЙӘТСӘ** *и.* Һыуһарҙар ғаиләһенә ҡараған бәләкәй генә нәҙек оҙон йырткыс йәнлек. *Аҡ йәтсә. Йәтсә сысҡан тота.*

**ЙӘТӘС** *и.* **1.** Ҡоштоң саталы түш һөйәге. *Ҡаҙ йәтәсе. Тауыҡ йәтәсе.*

**2.** Шул һөйәкте айырышып уйнай торған отош уйыны (отҡан кешегә ни бирергә алдан һөйләшеп, ике сатаһынан икәү тотоп һындыралар ҙа, береһе икенсеһенә үҙ ҡулынан бер нәмә тоттороғра тырышалар; тотҡан саҡта «иҫемдә» тип әйтһә, отолмай, онотҡан булып, шуны әйтмәһә, «йәтәс» тип, уны оталар). *Йәтәс айырышыу. Йәтәс отоу.*

**3.** Мылтыҡтың сәп алыҫлығына ҡарап, ҡалҡытып-төшөрмәле мәрәйлеге. *Йәтәсле мылтыҡ.*

**4.** Саталап сигелгән биҙәк.

**ЙӘҮҘӘТ** [*ғәр.*] *и.* **1.** *иҫк. кит.* Юғары сифат, өҫтөнлөк.

**2.** (*баш хәреф менән*) Ир-ат исеме.

**ЙӘҮЖӘ** *и. ҡар.* **жәүҙа.**

**ЙӘҮКӘ** [*рус.* явка] *и.* Саҡырыу, өндәү йәки юғалған нәмәне эҙләү хәбәре. *Йәүкә таратыу.* ■ *Хәмзә бай, айғырымды урланылар тип, йәүкә һалған.* Ғ. Әмири.

**ЙӘҮКӘЛӘҮ** *к.* **1.** Халыҡҡа берәй хәбәр һалыу; йәүкә һалыу. *Йәүкәләп эҙләү.* ■ — *Көн әлгәре йәүкәләмәгеҙ, ҡыҙҙар. Мин дә шикләнәм был эшкә,— тине ҡапҡа төбөнә еткәс, туҡталып.* Н. Мусин.

**2.** *диал.* Ошаҡлау. *Йәүкәләп тә өлгөргән!*

**ЙӘҮКӘСЕ** *и. диал.* Ошаҡсы.

**ЙӘҮМ** [*ғәр.*] *и. иҫк. кит.* Көн, тәүлек.

**ЙӘҮҺӘР** [*ғәр.*] *и.* **1.** Аҫыл таш. **Зәңгәр йәүһәр** фәйрүзә таш. **Йәшел йәүһәр** зөбәржәт таш. **Ҡыҙыл йәүһәр** ҡыҙыл яҡут ташы.

**2.** (*баш хәреф менән*) Ҡатын-ҡыҙ исеме.

● *Хеҙмәт тормош йәүһәре.* Әйтем.

**ЙӘҮШӘН** *и.* Һуғышта уҡ, ҡылыстан һаҡланыу өсөн күкрәк менән арҡаға кейелгән ике яҡлы киң япҡыс (борон ҡаты күн тышлы ҡалын кейеҙҙән, һуңыраҡ тимерҙән эшләнгән).

**ЙӘХМӘРЕШ** *с.* Шамтыр, эшлекһеҙ. *Йәхмәреш ҡыҙҙар менән мин урамдарҙа йөрөйөм.* Ш. Бабич.

**ЙӘҺАЛӘТ** [*ғәр.*] *и. иҫк. кит.* Белемһеҙ, наҙан.

**ЙӘҺАЛӘТЛЕК** *и. иҫк. кит.* Наҙанлыҡ. *Мәгарифтан булып ҡаплы күҙегеҙ һәм дә йөҙөгөҙ, аталып «ҡыҫҡа аҡылдар», йәһаләтлектә йөҙҙөгөҙ.* Д. Юлтый.

**ЙӘҺЕД** [*ғәр.*] *и. иҫк. кит.* Тырышлыҡ.

□ **Йәһед итеү** тырышыу.

**ЙӘҺЕЛ** [*ғәр.*] *и. иҫк. кит.* Аҡылһыҙлыҡ; наҙанлыҡ. *Эй, китап, мин аңраны төҙ юлға күндерһәнә, мине баҫҡан йәһел утын һыу һибеп һүндерһәнә.* Ш. Бабич. **Йәһле мөрәккәб** ҡара наҙан.

**ЙӘҺҮД** [*ғәр.*] *и.* Тарихи яҡтан сәмит телдәре төркөмөнөң боронғо халыҡтарының береһенә ҡараған, хәҙерге көндә төрлө илдәрҙә шул илдәрҙәге төп халыҡтың дөйөм тормошо менән йәшәгән халыҡтарҙың дөйөм этник исеме һәм шул халыҡтарҙың бер кешеһе; еврей.

**ЙӘҺҮДИ** [*ғәр.*] *с.* **1.** Йәһүдкә мөнәсәбәтле.

**2.** *и. мәғ.* Йәһүд халҡының бер кешеһе.

**ЙӘҺӘННӘМ** [*ғәр.*] *и.* **1.** Дини ҡарашса, гөнаһлы кешеләр үлгәндән һуң барып, мәңге утта яна торған икенсе донъя; тамуҡ. *Йәһәннәмгә инеү.* **Йәһәннәм уты** 1) дини ҡарашса, йәһәннәмдәге гөнаһлы кешеләрҙе яндыра торған ут; 2) *күсм.* бик эҫе урын. *Йәһәннәм утында интегеп йөрөгән ураҡсылар яландың төрлө еренә төрлөсә һибелгән.* Һ. Дәүләтшина.

**2.** *күсм.* Ғазаплы, тынысһыҙ, ауыр тормош. *Был йәһәннәм, был һуғыш, был ҡанлы вәхшәт, ихтимал ер-йыһан аҫты-өҫкә әйләнмәйенсә бөтмәҫ, ихтимал.* Ш. Бабич.

◆ **Йәнең йәһәннәмгә киткер** *ҡарғ.* үл, юҡҡа сыҡ. **[Йәнен] йәһәннәмгә оҙатыу** үлтереү. *Рәүф Дәүләтов алты фашистың йәнен йәһәннәмгә оҙатты.* Ә. Ихсан .. **Йәһәннәм аръяғы** (*йәки* **арты, аҫты, тишеге, төбө**) бик алыҫ ер. *Атайымды күрер өсөн йәһәннәм артына китер инем. Бик һағындым.* Р. Низамов. *[Татлыбикә:] Район бик алыҫ, йәһәннәм төбөндә ята.* Я. Хамматов. **Йәһәннәмгә китеү** 1) үлеү, юҡҡа сығыу; 2) китеп, ғәйеп булыу.

**ЙӘҺӘННӘМИ** [*ғәр.*] *с.* Йәһәннәмгә хас, йәһәннәмдәге. *Йәһәннәми ғазап.*

**ЙӘҺӘРЕҮ** [*ғәр.*] *к. иҫк. кит.* Кешегә иштеттереп, ҡысҡырып һөйләү.

**ЙӘҺӘРТЕҮ** *к. иҫк. кит. йөкм. ҡар.* **йәһәреү.**

**ЙӘҺӘТ** [1] [*ғәр.*] *и.* **1.** Эш, хәлдең йүнәлеше; яҡ, тараф. *Ғилми йәһәттән нигеҙләү.* ■ *Ырымбурҙа*

*башкорт халкының культура тарихына бәйле булган иҫтәлекле урындар шактай күп. Был йәһәттән иң тәүҙә Карауанһарай телгә алына.* К. Мәргән.

**2.** Ниҙеңдер йүне, яйы. *[Бай балалары] кәйеф асыу, рәхәт йөрөү йәһәтен карайҙар ине.* М. Ғафури.

**ЙӘҺӘТ** [2] [*гәр.*] *р.* Тиҙ хәрәкәт менән, тиҙ генә; етеҙ, тиҙ. *Йәһәт эшләү. Йәһәт кенә килеп етеү. Йәһәт кузғалыу.* ■ *[Ишбай:] Бар, әҙерлән, әсәй, тиҙ, йәһәт бул.* З. Биишева. *Ниңә моңаяһың, Йәнгүзәлем, йәһәтерәк һөйләп бир инде.* А. Игебаев. *Акъял батыр йәһәт кенә ағас башына менеп киткән* (Әкиәттән). // *Мурзиндың йәһәт командаһы аҫтында улар [бандиттар] өҫтөнә ташланып, ут яуҙыра башланылар.* Һ. Дәүләтшина.

**ЙӘҺӘТЛЕК** *и.* Етеҙ хәрәкәт, тиҙлек, етеҙлек. *Бомбардировщиктар ыласын йәһәтлеге менән түбән атыла.* Ә. Вәли.

**ЙӘҺӘТЛӘНЕҮ** [1] *к. төш. кар.* **йәһәтләү** [1]. *Ашарға йәһәтләнде.*

**ЙӘҺӘТЛӘНЕҮ** [2] *к.* Йәһәт хәрәкәт алыу; етеҙләнеү. *Эш йәһәтләнде.*

**ЙӘҺӘТЛӘТЕҮ** [1] *к. йөкм. кар.* **йәһәтләү** [1]. *Аш йәһәтләтеү.*

**ЙӘҺӘТЛӘТЕҮ** [2] *к.* Тиҙләтеү, тиҙ-тиҙ итеү. *Ғафури [картты] йырактан ук күреп калды ла аҙымын йәһәтләтә төштө.* С. Кудаш.

**ЙӘҺӘТЛӘҮ** [1] *к.* Хәстәрлек итеп әҙерләү; йүнләү. *Ашарға йәһәтләү. Утын йәһәтләү.*

**ЙӘҺӘТЛӘҮ** [2] *к.* **1.** Тиҙләтеү, тиҙ-тиҙ ашыктырыу. *Аҙымды йәһәтләү. Эште йәһәтләү.* ■ *— Килен, килен, кунак килде бит, сәйеңде йәһәтлә.* Н. Мусин.

**2.** Ашығыу, тиҙ-тиҙ кузғалыу. *Иштуган оҙон-оҙон баҫып, йәһәтләп, өйөнә кайтып китте.* З. Биишева.

**ЙӘҺӘТСЕЛ** *с.* Эште һ. б. хәстәрләп, вакытында башкарыусан; йүнсел. *Йәһәтсел кеше. Йәһәтсел булыу.*

**ЙӘШ** [1] *с.* **1.** Ғәмәлдәге йәшәгән ғүмере әле әҙ; киреһе карт. *Йәш кеше. Йәш кыҙ. Йәш быуын. Йәш үҫмер. Йәш сак. Төҫкә йәш. Йәш булыу.* ■ *Йәш егеттәр гармун косаклап, урам буйлап йырлап үттеләр.* Ғ. Амантай. *Йәш ғүмерем үтеп китте һыуҙай аккан, матур кыҙҙай ишек асып кире япкан.* Акмулла. // *Карты ла бар был илдең, йәше лә бар был илдең* (Кобайырҙан). **Башың йәш** *йәки* **йәш башың менән** кешене йәш яғынан кәм куйып, шелтәләп әйтелә. *Кешеләр ҙә миңә карай. Йәнәһе, йәш башы менән ултыра, ә оло кеше баҫып тора.* Р. Солтангәрәев. **Йәш бала** имсәк ташламаған бәләкәй бала. / Бүтән берәү менән сағыштырғанда, ғәмәлдәге йәшәгән ғүмере кәм, кесе; киреһе оло. *Йәш еңгә. Йәш коҙа. Ул минән йәш.* ■ *Асатай Айбулатка карағанда байтак йәш.* Һ. Дәүләтшина. *Бында килгән кешеләр араһында иң йәше мин.* Д. Юлтый. **Йәш** бисә күп катынлы кешенең иң һуңынан алған катыны. / Ғәмәлдәге йәшәгән ғүмере әҙ кешегә хас. *Йәш йөрәк.* ■ *Дәртле абыстайҙың йәш каны шунда ук йөҙөнә һикерҙе.* Б. Бикбай. *Сыныкмаған, ныгымаған йәш зиһен бик кыҫка була бит.* Х. Мохтар.

**2.** Күптән түгел барлыкка килгән, күптән түгел йәшәй, үҫә башлаған. *Йәш ағас. Йәш мал. Йәш үҫенде. Йәш әҙәбиәт.* / Берәй өлкәлә эшмәкәрлекте күптән түгел башлап ебәргән. *Йәш белгес. Йәш һалдат. Йәш яҙыусы.* ■ *Йәш тарихсы карт Зәкиҙе әрләнеләр кәрлә тип.* Ш. Бабич. *Күптән түгел техникум бөтөрҙө, йәш төҙөүсе булып сыкты ул.* Ғ. Сәләм.

**3.** Кибеп катмаған, коромаған; сей. *Йәш тал. Йәш утын.* ■ *[Миңлеямал] һыйыр алдына яңы сабып алып килгән йәш үләнде һалды ла өйөнә кайтты.* Я. Хамматов. / Кибеп һарғаймаған; йәшел. *Йәш япрак. Йәш үлән.*

**4.** Иҫкереп үҙгәрмәгән; яңы. *Һуңғы япрак һыйғыр һабағынан өҙөлөп төштө йәш кар өҫтөнә.* Р. Ғарипов.

**ЙӘШ** [2] *и.* Йәшәгән ғүмер оҙонлоғон билдәләгән йыл иҫәбе. *Кесе йәш. Оло йәш. Урта йәш. Мәктәп йәшендәге бала. Йәште иҫәпләү. Утыҙ йәш менән бара.* ■ *— Нисә йәштә? — Ун алтыла.— Тимәк, оло гына бер һыйыр йәше бар икән.* С. Агиш. *Ун дүрт йәше тулғанда, [Салауат] яңғыҙ айыу аулаған.* Р. Ниғмәти. *[Мулла:] Кыҙ быйылға бирерлек түгел, йәше етмәгән.* Һ. Дәүләтшина. *Ағастың йәшен билдәләүе анһат, уның дүңгәләктәре йәш һанын үҙе әйтеп тора.* «Совет Башкортостаны», 1985, 18 апрель.

◆ **Кара йәштән** бик бәләкәй сактан. *Үгеҙ егеп һөргән атай ошо кара ерҙе кара йәшенән.* С. Әлибаев.

● *Ашын ашаған, йәшен йәшәгән.* Әйтем. *Ирҙең йәше ике утыҙ.* Әйтем.

**ЙӘШ** [3] *и.*, **күҙ йәше** Күҙ биҙҙәренән һығылып сыккан әскелтем шыйыклык. *Борсак-борсак күҙ йәше. Йәш бөртөгө. Йәште һөртөү. Күҙгә йәш килеү. Күҙгә йәш тулыу.* ■ *Ул [Шәүәли] йәшенә быуылып, һүҙенән туктаны.* Б. Бикбай. *Ирочка үкһеп иланы. Минең беләккә кайнар күҙ йәше тамды.* Д. Юлтый. *Акъял батырға бик кыйын булып киткән, күңеле тулған, мөлдөрәп күҙенән йәш тамған* (Әкиәттән). *Таш аҫтынан сыккан йылға тиһәм, күҙҙәремдән сыккан йәш икән* (Халык йырынан). **Йәш аралаш** илай-илай, иламһырап. *[Фатима] йәш аралаш үпкәләй башланы.* Б. Бикбай. **Йәш йотоу** илар ерҙән иламай түҙеү (нык кайғынан). **Күҙгә йәш алыу** илау. **Канлы йәш** әсе ғазаптан булған күҙ йәше. *Канлы йәш түгеү.* ■ *Баҫмаһын да донъя хәсрәттәре, канлы йәш тулмаһын күҙемә* (Халык йырынан). **Әсе күҙ йәше** каты зарлы, кайғылы күҙ йәше.

◆ **Күҙ йәше төшөү** кешене рәнйеткәндең коһорон күреү.

● *Ата һуккан аш ейер, әсә һуккан йәш түгер.* Әйтем. *Юрғаның тире кипмәҫ, иркәнең йәше кипмәҫ.* Әйтем.

**ЙӘШЕЛ** *с.* **1.** Спектрҙағы төп төҫтәрҙең береһе — һары менән зәңгәр араһындағы төҫ; үлән, йәш япрак төҫө. *Асык йәшел. Кара йәшел. Йәшел буҫтау. Йәшел бүяк. Йәшел ебәк. Йәшел тугай. Йәшел шыршы. Мәңге йәшел ағас.* // *Йәшелгә бүяу.* ■ *Салауат нисә йәшендә, йәшел камсат бүрке башында* (Халык йырынан).

**2.** Кибеп һарғаймаған; йәш. *Йәшел бесән. Йәшел сиҙәм. Йәшел япрак.* ■ *Кыҙрас аш әҙер-*

ләтә. *Кискә табан йорт уртаһына, йәшел үлән өҫтөнә ҙур табын йыйыла* (Әкиәттән).

♦ **Ут йәшел** йәш үлән төҫлө. *Ут йәшел күлдәк.*

● *Йәшел төҫ — күҙ ялы.* Әйтем.

**ЙӘШ-ЕЛБӘҘӘК** *с.* Йәш, шат, вайымһыҙ. *Йәш-елбәҙәк булыу.* ■ *Йәш-елбәҙәк сағыңда болан кеүек елеп ҡал* (Халыҡ йырынан).

**ЙӘШЕЛДӘР** *и. тар.* Граждандар һуғышы ваҡытында интервенттарға ҡаршы күтәрелгән партизандар. *Таланған, эштән сығарылған халыҡ тауҙарға күсте. Бөтә тау буйҙары йәшелдәр, икенсе төрлө әйткәндә, партизандар менән ҡайнай башланы.* И. Насыри.

**ЙӘШ-ЕЛКЕНСӘК** *и. йыйн.* Йәш кешеләр, йәштәр. *Ағиҙел һыуы өҫтөн ҡаплап алған йәш-елкенсәктең, кәмәләрҙә ығы-зығы килеп, ҡайнашып йырлап йөрөүҙәре мине лә үҙенә тартты.* Т. Йәнәби. *Һыу ташыу ауыл халҡы өсөн үҙе бер байрам. .. Малай-шалай сурәкә һуға, йәш-елкенсәк өҙгөс, таҡта яргыс, сәпәмә туп уйнай.* Р. Солтангәрәев.

**ЙӘШЕЛЛЕК** *и.* **1.** Йәшел төҫ. *Йәшеллек юҡ, инде япраҡтары алтынланған бик күп ағастың.* Ғ. Сәләм. *Ҡомлоҡтағы йәшел тирәк йырлай: «Йәшеллекте һаҡлай алманым. .. Япраҡтарым кипте, елгә осто, йәшел булып ҡала алманым».* Ғ. Хәйри.

**2.** Йәшел үҫемлек. *Йәшеллеккә күмелгән урам.* ■ *Аҡрын иҫкән көньяҡ еле күҙ күреме ергә йәйелеп киткән йәшеллек диңгеҙен яй ғына, ялҡау ғына, ауыр ғына тулҡындыра ине.* Ғ. Дәүләтшин.

**ЙӘШЕЛЛЕ-КҮКЛЕ** *с.* Йәшел менән күк төҫ аралаш. *Йәшелле-күкле сатин юрған. Йәшелле-күкле булыу. Йәшелле-күкле итеү.*

♦ **Йәшелле-күкле тауыш** йәмһеҙ әсе тауыш. *[Мулла] оҙон итеп һуҙып, йәшелле-күкле тауыш менән уҡырға тотонҙо.* Д. Юлтый.

**ЙӘШЕЛЛӘНДЕРЕЛЕҮ** *ҡ. төш. ҡар.* **йәшелләндереү.**

**ЙӘШЕЛЛӘНДЕРЕҮ** *ҡ.* Ағас, ҡыуаҡ һ. б. ултыртып, йәшел итеү. *Ауылдарҙы, ҡалаларҙы йәшелләндерергә бөтә халыҡты ылыҡтырыу.*

**ЙӘШЕЛЛӘНЕҮ** *ҡ.* **1.** Йәшел төҫ алыу. *Урам, баҡсаларҙа йәшелләнде ҡайын, муйылдар.* М. Тажи.

**2.** Йәшел төҫтә булыу. *Ә түбәндә йәшелләнеп, йәмле ҡыуаҡлыҡ ята.* Ғ. Ибраһимов.

**ЙӘШЕЛЛӘТЕҮ** *ҡ.* Йәшел итеү. *Яҙ йылыһы ағастарҙы йәшелләтте.*

**ЙӘШЕЛЛӘҮ** *ҡ.* Йәшелгә буяу. *Ҡапҡаны йәшелләү.*

**ЙӘШЕЛСӘ** *и.* Ашамлыҡ өсөн баҡсала үҫтерелгән төрлө үлән үҫемлек һәм уның емештәре (ҡыяр, кишер, помидор, сөгөлдөр һ. б.). *Тоҙланған йәшелсә. Йәшелсә консервалары. Йәшелсә ашы. Йәшелсә баҡсаһы. Йәшелсә ултыртыу.*

**ЙӘШЕЛСӘСЕ** *и.* Йәшелсә үҫтереүсе.

**ЙӘШЕЛСӘСЕЛЕК** *и.* Йәшелсә үҫтереү эше. *Йәшелсәселек бригадаһы.*

**ЙӘШЕЛ-ҺӘҢГӘР** *и.* **1.** Тәндәге үлекләү, сабыртыу кеүек ауырыуҙарҙы дезинфекциялау, зарарһыҙландырыу сараһы итеп ҡулланыла торған антисептик дарыу. *Малдың ҡортлаған еренә йәшел-һәңгәр һөртәләр.*

**2.** Баҡыр купоросы.

**ЙӘШЕН** *и.* Атмосфера электрының һауала зарядһыҙланыуы ваҡытында барлыҡҡа килгән сатҡы. *Йәшен атыу. Йәшенле ямғыр.* ■ *Ҡапыл күк күкрәгән, йәшен йәшнәгән, ҡойоп ямғыр яуа башлаған* (Әкиәттән). *Был Ҡусимов ине, батыр улы, һөйгән улы башҡорт халҡының. Ҡара юрға ҡара йәшен булып ябырылды дошман өҫтөнә.* Р. Ниғмәти. **Йәшен ташы** 1) туп булып тәгәрләп йөрөгән йәшен.— *Әллә тейҙеме, алдыма йәшен ташы төштө! Зәңгәрле-күкле туп булып, балтам осонан әллә ҡайҙа тәгәрләп китте.* К. Кинйәбулатова; 2) йәшел төҫтәге аҫыл таш; йәшмә. *Аллаяр мулла һандыҡ кеүек нәмәһен асты ла, зөбәржәт, фирүзә, .. йәшен ташы, ҡояш күҙе кеүек ҡиммәтле таштарын Маврингә күрһәтеп сыҡты.* Ш. Шәһәр. **Йәшен ҡайтарғыс** (*йәки* **тотҡос**) йәшен атмаһын өсөн бейек ҡоролмаларҙың башына күтәреп, бер осо ергә тоташтырып ҡуйылған йыуан тимерсыбыҡ.

♦ **[Аяҙ көндә] йәшен һуҡҡандай** (*йәки* **атҡандай) булыу** көтмәгән бер хәл, хәбәр булғанда әйтелә. **Йәшендән ҡасҡан [шайтан] һымаҡ** нык ҡурҡып ҡасыуға ҡарата әйтелә. **Йәшен уйнатыу** ҡеүәт, ғәйрәт сәсеү; ут уйнатыу. *Һыбайлы ғәскәр йәшен уйнатып дошманға ташланды.*

**ЙӘШЕНДЕРЕҮ** *ҡ.* Йәшенергә булышлыҡ итеү; йәшереү. *Кейәүҙең килгәнен ишеткәс, Фатиманы йәшендерҙеләр.* Ж. Кейекбаев.

**ЙӘШЕНЕП-БОҪОНОП** *р.* Кеше күҙенә күренмәҫкә, һиҙҙермәҫкә тырышып; ҡасып-боҫоп. *Улар [дошмандар] былтыр үҙҙәренең яман эштәрен асыҡтан-асыҡ эшләһә, хәҙер йәшенеп-боҫоноп ҡына эшләй башланы.* Һ. Дәүләтшина.

**ЙӘШЕНЕҮ** *ҡ.* Күҙҙән ҡасып ышыҡланыу, ышыҡланып боҫоу. *Йәшенеп тороу. Йәшенеп ятыу.* ■ *Мин ҡурҡып, ҡапҡаның йыуан бағанаһы артына йәшендем.* Н. Ғәлимов. *Йәмилә Ҡоломбәтте белеп торған, .. йәшенеп бер өйгә кереп торған.* «Бабсаҡ менән Күсәк». / Ышыҡланып, күҙҙән юғалыу. *Ҡояш тау артына йәшенде.*

**ЙӘШЕНЛӘҮ** [1] *ҡ.* Йәшен йәшнәтеү. *Йәшенләп яуған ямғырлы төн ине.* С. Ҡулибай.

**ЙӘШЕНЛӘҮ** [2] *ҡ. диал.* Йәшнәү.

**ЙӘШЕНМӘК** *и.* Балалар уйыны (берәү күҙен баҫып, гөргөлдәй, бүтәндәре йәшенә; кем, табылғас, алдан килеп туҡылдатып өлгөрмәй — икенсе юлы шул гөргөлдәй). *Нәсимә ағаһы менән уйнап йөрөй йәшенмәк. Ағаһы күҙен ҡаплай ҙа, ҡысҡыра: «Гөр-гөр-гөр! — ти.— Мин утыҙға һанағанса, һин йәшенеп өлгөр»,— ти.* Ә. Вахитова.

**ЙӘШЕРЕЛЕҮ** *ҡ. төш. ҡар.* **йәшереү.** *Йәшерелгән байлыҡ.*

**ЙӘШЕРЕН** *с.* **1.** Кемдән дә булһа йәшерелә торған, күптәргә билдәле булмаған. *Йәшерен договор. Йәшерен эш. // Йәшерен килешеү. Йәшерен эшләү.* ■ *[Айбулат] волисполком аттарынан иң яҡшы парҙы ектереп, Асатайҙы йәшерен пакет менән Самарға губчекаға оҙатты.* Һ. Дәүләтшина. *Башҡаларға йәшерен булған Байгужа ваҡиғаһы минең башта тора.* Д. Юлтый.. *Ҡай сағында аҡрын ғына бер ел иҫеп, ағастарға минән йәшерен ниҙер һөйләй.* Ш. Вабич.

**2.** Тыш яҡтан беленмәгән, бүтәндәрҙән йәше-

релә торған (уй, хис, фекергә ҡарата). *Йәшерен фекер. Йәшерен шатлыҡ.* ■ *Минең бер асыҡ күңелле танышым бар. Бер генә йәшерен уйы ла юҡ уның, эсендәге — тышында.* Ф. Исәнғолов. *Ш. Бабичтың тәбиғәт лирикаһында ла әкиәттәрҙәгесә ауан хыялды, мәсәлдәгесә йәшерен аллегорияны яҡшы күрәбеҙ.* К. Әхмәтйәнов.

**3.** Закон тарафынан рөхсәт ителмәй торған, йәшереп эш итә торған. *Йәшерен йәмғиәт. Йәшерен түңәрәк.* ■ *Тарихи «Урал» газетаһының Ырымбурҙа сыҡҡан булыуы билдәле. Ҡайҙалыр ошо урамдарҙың береһендә был газетаның йәшерен типографияһы урынлашҡан булғандыр.* К. Мәргән. *Йәшерен йыйылыштарҙа тәү телмәр һөйләгән, .. охранкалар өсөн ҡурҡыу һалған ун һигеҙ йәшендә был егет.* М. Хәй. *[Ойошманың] бер төркөмө йәшерен рәүештә һалдат кейемдәре һатып ала.* Д. Юлтый.

**4.** Революцияға тиклем: бигерәк тә политик енәйәтселәрҙең эштәрен һ. б. алып барыу өсөн тәғәйенләнгән, хеҙмәт иткән. *Йәшерен агентура. Йәшерен полиция.*

♦ **Донъя йәшерендәре** донъяның һәр кем аңлай алмаған төрлө мутлыҡ һәм хәйләләре. *[Абыстай:] Мин әле йәп-йәш, донъя йәшерендәрен яңы еҫкәй башланым.* Т. Хәйбуллин. **Йәшерен тауыш** ҡултамға ҡуйылмаған бюллетень йәки шар төшөрөп бирелә торған тауыш. *Халыҡ депутаттарының бөтә Советтарына депутаттар һайлау дөйөм, тиң һәм тура һайлау хоҡуғы нигеҙендә йәшерен тауыш биреү юлы менән үткәрелә.* Башҡорт АССР-ының Конституцияһы, 1984.

**ЙӘШЕРЕН-БАТЫРЫН** *с.* Кемдән дә булһа йәшерелә торған, йәшереп эш ителә торған; йәшерен. *Ҡайһы бер йәшерен-батырын эштәренең өҫкә ҡалҡып сығыуынан шөрләй ул [Саҡай].* Б. Бикбай. // — *Йәшерен-батырын түгел, ағай. Мин ботинканы түгел, уның уҡытыусыһын яратмайым.* Я. Вәлиев.

**ЙӘШЕРЕН-БОШОРОН** *с.* Кешеләргә белдермәй, һиҙҙермәй эш ителә торған; йәшерен; йәшерен-батырын. *Йәшерен-бошорон эштәр.* // *Йәшерен-бошорон ҡыланыу.* ■ *[Ҡыраубикә:] Ундай ваҡытта ил ҡарттарына кәңәш итә торғайнылар, ә һеҙ йәшерен-бошорон ғына эшләргә уйлайһығыҙ.* Д. Юлтый.

**ЙӘШЕРЕНЕҮ** *ҡ. диал.* Йәшенеү.

**ЙӘШЕРЕҮ** *ҡ.* **1.** Сит күҙ күрмәҫлек урынға йыйыу, сит күҙҙән ҡасырыу. *Йәшереп ҡуйыу.* ■ *[Сәғиҙә:] Бабай, бынау саңғыларҙы алып китеп, берәй ергә йәшереп ҡуй әле. Күңелемә ауыр булып, күҙ алдымда тормаһын.* М. Тажи. *Әбей яулығын эйәк аҫтынан салып бәйләй һалды, аҡ сәстәрен яулығы эсенә йыйып йәшерҙе.* Ф. Исәнғолов. *Егет ҡыҙҙың мамыҡ тунын алып йәшергән* (Әкиәттән). **Ҡыҙ йәшереү** *ҡар.* **ҡыҙ.**

**2.** Ышыҡҡа алыу, ышыҡлау. *Елдән битте йәшереү. Ҡулды артҡа йәшереү.* ■ *Мин уның [аттың] яйына бик тиҙ төшөндөм. Бер күҙен елдән йәшереп, үҙ уңайына ҡуйҙым.* Д. Юлтый.

**3.** Кешегә белдермәй йөрөү. *Исемде йәшереү. Ҡайғыны йәшереү. Серҙе йәшереү.* ■ *Юламан ҡарт кескәй баланың йөрәген яраламаҫ өсөн теге ваҡытта унан әсәһе хаҡындағы дөрөҫлөктө йәшергәйне шул.* З. Биишева. *Ҡуйсы, Зәйнәп, Сәйҙел менән булған һөйөү хисеңде лә йәшермә!* Ғ. Сәләм.

♦ **Күҙ йәшереү** күҙгә күренмәҫ булыу; ҡасыу. **Эҙ йәшереү** *ҡар.* **эҙ. Яулыҡ йәшереү** йәштәр уйыны (түңәрәкләп ултыралар; бер кеше түңәрәк тышында йырлап йөрөй-йөрөй ҙә, берәүҙең артына һиҙҙермәй генә яулыҡ һалып китә; теге кеше һиҙеп ҡалһа, яулыҡты алып баҫтыра башлай, баҫтырғаны түңәрәк эсенә инергә тейеш түгел; инһә: «Ҡаҙан ярылды!» — тип ҡысҡыралар; ҡыуып етеп, яулыҡ менән һуҡҡас, улар урын алмаша; яулыҡ һалғанды һиҙмәгәндә, йәшергән кеше: «Эркет ташты!» тип ҡысҡыра; һәр берәү үҙенең артын ҡарай, кем яулыҡ таба — шул баяғыса баҫтырырға тотона).

● *Ауырыуын йәшергән үлер, бурысын йәшергән бөлөр.* Әйтем. *Йомошка килһәң, туҫтағыңды йәшермә.* Әйтем.

**ЙӘШЕРМӘЛӘҮ** *ҡ.* Кешенән ҡыҙғанып, күрһәтмәҫкә тырышып ҡыланыу. *Йәшермәләп йөрөү.*

**ЙӘШЕРТЕН** *с. диал.* Йәшерен.

**ЙӘШЕРТЕН-БОШОРТОН** *с. диал.* Йәшерен-бошорон.

**ЙӘШЕТ** *с. диал.* Йәштәш.

**ЙӘШКЕЛТ** *с.* Йәшелгә тартым, йәшел төҫ ҡатыш. *Йәшкелт ебәк. Йәшкелт күҙ. Йәшкелт һары. Йәшкелт булыу. Йәшкелт итеү.* ■ *Йәшкелт тау битендәге ергә һуҙылып ятҡан аҡ томан.* Ғ. Хәйри.

**ЙӘШКӘҘӘТЕҮ** *ҡ.* Күҙ йәше килтереү, йәшле итеү. *Күҙҙе йәшкәҙәтеү.*

**ЙӘШКӘҘӘҮ** *ҡ.* **1.** Күҙ йәшенә мансылыу; йәшләнеү. *Зөлхизә .. йәшкәҙәгән күҙҙәрен иренә күрһәтмәҫ өсөн ситкә боролоп, әйәген ҡаҡты.* Н. Мусин.

**2.** *күсм.* Ауыр ҡара болот булып, дымға тулышыу. *Күк йәшкәҙәп тора, яуыр, ахыры.*

**ЙӘШКӘК** *с.* **1.** Гел йәшкәҙәп торған, йәше кипмәгән. *Йәшкәк күҙле ҡыҙыҡай.*

**2.** *күсм.* Яуынлы, йонсоу. *Йәшкәк көн.*

**ЙӘШКӘКЛӘНЕҮ** *ҡ. ҡар.* **йәшкәкләү.**

**ЙӘШКӘКЛӘҮ** *ҡ.* **1.** Туҡтамай йәшкәҙәү. *Күҙе йәшкәкләп тора.*

**2.** *күсм.* Болотлап, ара-тирә амғыр һибәләү; йонсоулау. *Көн йәшкәкләне.*

**ЙӘШЛЕ** *с.* Күҙ йәшкә тулышҡан. *Ҡыҙ йәшле күҙҙәрен һөртә-һөртә: «Рәхмәт инде, егет»,— ти* (Әкиәттән).

**ЙӘШЛЕК** [1] *и.* **1.** Үҫмер саҡтан алып үҫеп еткәнгә, бәлиғ булғанға тиклемге саҡ; йәш саҡ; киреһе ҡартлыҡ. *Йәшлек дәүере. Йәшлек көндәре. Йәшлек дәрте.* ■ — *Үткән ғүмерҙе кире ҡайтарып булмай, йәшлегеңдең ҡәҙерен белеп йәшәргә тырыш, .. үтеп киткән йәш ғүмер һағындыра ла, үкендерә лә икән.* М. Тажи. *Беҙҙең йәшлек ҡабатланмаҫ өсөн юғала.* Ғ. Хәйри.

**2.** Йәш [1] (2 мәғ.) булыу хәле йәки сифаты. *Әҙәбиәтебеҙҙең йәшлеге тураһында һүҙ сыҡҡанда иң тәүҙә проза жанрын телгә алалар.* К. Мәргән.

**ЙӘШЛЕК** [2] *с.* Күпмелер йәштә булған; йәштәге. *Алты йәшлек бала.* ■ *Усманғәле ун алты*

*йәшлек егет булып киткән. Кәүҙәгә ҙурайған.* Ғ. Дәүләтшин.

**ЙӘШЛӘЙ** *р.* Йәш саҡтан, йәш көйө. *Ата-әсәнән йәшләй ҡалыу. Йәшләй өйләнеү.* ■ *Йәшләй йәтим үҫтем, ата йөҙөн, әсә мәрхәмәтен күрмәнем.* Ғ. Амантай.

**ЙӘШЛӘНДЕРЕҮ** *к. ҡар.* **йәшкәҙәтеү.** *Күҙҙе йәшләндереү.*

**ЙӘШЛӘНЕҮ** *к.* Йәш менән сыланыу, йәшкә тулыу (күҙгә ҡарата). *Һыуыҡҡа йәшләнеү.* ■ *Ҡарасалев та көлөп, йәшләнгән күҙен һөрттө.* А. Таһиров.

**ЙӘШЛӘТЕҮ** *к. ҡар.* **йәшкәҙәтеү.** *Әсәйемде тол ҡалдырып, ике күҙен йәшләтеп, кәйнә булған Уралым* (Ҡобайырҙан).

**ЙӘШЛӘҮЕК** *и.* Йәшел генә үлән булып ятҡан урын; йәшән. *[Мораташа ағай] йәшләүеккә ултырып, ашыҡмай ғына тәмәке төрҙө.* Ф. Иҫәнғолов. *Ҡандраҡүл буйы туғай-туғай, туғайҙары уның йәшләүек* (Халыҡ йырынан).

**ЙӘШМӘ** [*гәр.*] *и.* Биҙәрләнеп торған ҡыҙыл, йәшел һ. б. төҫтөгө ҡаты таш (төрлө матур нәмәләр яһау өсөн ҡулланыла). *Йәшмә тип Учалы, Әбйәлил, Баймаҡ, Хәйбулла райондарында осрай торған ҡыҙыл ташты әйтәләр. Ул — сакма таштарҙың бер төрө.* «Совет Башҡортостаны», 1970, 7 ноябрь.

**ЙӘШНИК** [*рус.* ящик] *и.* Берәй нәмә һалыу, һаҡлау өсөн таҡта, ҡатырға кеүек нәмәнән дүрткелләп яһаған төрлө ҙурлыҡтағы һауыт. *Почта йәшниге. Йәшник таҡтаһы. Бер йәшник алма. Ике йәшник сәй.* ■ *Ғариф ағайҙың өй башында тимер-томор тултырылған бер йәшниге бар.* Б. Бикбай.

**ЙӘШНӘТЕҮ** *к.* **1.** Саҡҡылы итеү, саҡҡыландырыу (йәшендә). *Бер ваҡыт ер һелкетеп, күк күкрәтеп, йәшен йәшнәтеп дейеү ҡайтып килә, ти* (Әкиәттән).

**2.** *күсм.* Дер һелкетеү, ҡеүәт сәсеү. *Йәшнәтеп йәшәү.* ■ *Салауат йәшәй беҙҙең йөрәктәрҙә рухи көсөбөҙҙө йәшнәтеп.* Т. Карамышева.

**ЙӘШНӘҮ** *к.* **1.** Саҡҡы уйнатыу (йәшенгә ҡарата). *Күк күкрәп, йәшен йәшнәгәнен ҡарап торҙом. Ул бөтә ҡаланы, таш йорттарҙы яңғыратты, ҙур тәҙрәләр сылтырап, ҡалтырап торҙо.* С. Агиш.

**2.** *күсм.* Дәрт, ҡеүәт сәсеү. *Ярһымаһа күкрәк йәшнәп, күкрәп, телдәрендә ялҡын яна алмай.* Ш. Бабич. *Күк күкрәтеп, ер тетрәтеп, йәшнәп үтте йәш ғүмер.* Ҡ. Даян.

**ЙӘШТӘГЕ** *с.* Күпмелер йәштә булған; йәшлек. *Ун йәштәге бала.* ■ *Ике яҙыусы өҫтәл янында ултыра. Күренеүенсә, улар урта йәштәге, ҡырҡ биш-илле тирәһендәге кешеләр булырға тейеш.* С. Кулибай.

**ЙӘШТӘН** *р.* Йәш саҡтан, йәш ваҡыттан.— *Беҙҙең Мәрйәм йәштән музыкаға һәләтле булды.* Д. Юлтый. *Атаҡайым, мине йәштән бирҙең, күрә алманым күҙем түйғанса* (Халыҡ йырынан).

● *Аҡыл йәштән сыға, аҫыл нәмә таштан сыға.* Әйтем. *Баланы йәштән тый, ҡатынды баштан тый.* Әйтем.

**ЙӘШТӘР** *и.* Йәш кешеләр. *Ауыл йәштәре. Йәштәр йыры. Йәштәр уйыны.* ■ *Ҡарттар сәйгә ултырҙы. Йәштәр таралышты.* Һ. Дәүләтшина. *Ауылдың теге башынан бер төркөм йәштәрҙең гармун менән йырлашып килгәне ишет[елде].* М. Тажи.

**ЙӘШТӘШ** *и.* Кем менән дә булһа бер йәштәге, бер йылғы кеше. *Беҙҙе оҙатып ҡалыусылар: әсәйем, Шәриф йәштәш, тағы ла уҡытыусы Вәкифә.* Н. Ҡәрип. *Минең йәштәшем Жәлил Кейекбаев ысындан да талант эйәһе ине.* Ғ. Әмири. // *Ҡаршы ала япраҡтарын ҡағып йәштәш ҡайын тәҙрә төбөндә.* Х. Кәрим. / Йәш яғынан тиң кешеләрҙең үҙ-ара өндәшеү һүҙе.— *Шәһит йәштәш,— тине Дауыт Юлтый Хоҙайбирҙингә,— эш бик күп, ваҡыт тығыҙ.* «Ағиҙел», 1966, № 5.

**ЙӘШӘГӘН** *с.* Оло йәштәге; ҡарт. *Йәшәгән ҡуртан.* ■ *Күсәк бейгә күлдәк-ыштанды йәшәгән үгеҙ тиреһенән тегеп биргәндәр.* «Бабсаҡ менән Күсәк».

**ЙӘШӘЙЕШ** *и.* Йәшәү, тормош шарты. *Ижтимағи йәшәйеш.*

**ЙӘШӘЛЕҮ** *к.* **1.** *төш. ҡар.* **йәшәү** 1—3. *Алда һүтелмәгән йомғаҡ булып, ята йәшәлмәгән ғүмерем.* Ш. Бикҡол.

**2.** *эйһ. ф. ҡар.* **йәшәү** 1—3. *[Мәстүрә:] Көҙгө сәскә кеүек йәшәлә инде шунда.* М. Кәрим.

**ЙӘШӘМЕШ** *с.* Күп йәшәп, күпте белгән. *Йәшәмеш ҡарттар.* / Күп йәшәгән кешеләй күпте белеүсән. *Йәшәмеш бала.*

**ЙӘШӘН** *и.* Йәшел үләнле ер. *Иртәнсәкәй тороп колон ҡыуҙым Һаҡмар ғына буйы йәшәнгә* (Халыҡ йырынан).

**ЙӘШӘНГЕҘӘҮ** *к. диал. ҡар.* **йәшкәҙәү** 1.

**ЙӘШӘНКӘ** *и. диал. ҡар.* **терһәк** 2.

**ЙӘШӘРЕҮ** [1] *к.* **1.** Йәшелгә әйләнеү; йәшелләнеү. *Яҙҙар етте, көн йылытты, йәшәрҙе дала.* К. Кинйәбулатова.

**2.** Йәшел булыу. *Иртәнсәкәй тороп мин ҡараһам, йәшәрептәй ята тау башы* (Халыҡ йырынан).

**ЙӘШӘРЕҮ** [2] *к.* Йәш [1] (1 мәғ.) булыу, йәшкә әйләнеү. *Ғариф ҡарт та был арала байтаҡ йәшәреп киткән кеүек тойҙо үҙен.* Б. Бикбай. *Бөгөн, һине күргәс, йәшәрҙем мин.* М. Хәй.

**ЙӘШӘРЕҮ** [3] *к. диал.* Йәшләнеү.

**ЙӘШӘРТЕҮ** [1] *к.* Йәшелгә әйләндереү, йәшел итеү. *Ямғыр ерҙе йәшәртә.*

**ЙӘШӘРТЕҮ** [2] *к.* Йәш [1] (1 мәғ.) итеү, йәшкә әйләндереү. *[Кузьма:] Ә быны һин, иптәш, ҡарттарҙы йәшәртеү тураһында ни уйлайһың?* С. Агиш.

● *Яҡшылыҡ ирҙе йәшәртә.* Әйтем.

**ЙӘШӘТЕҮ** *к.* **1.** Үлтермәй, тереклек иттереү. *Был һуғыш беҙҙе йәшәтеү өсөн түгел, беҙҙе үлтереү өсөн яһалған.* Д. Юлтый. *Дарыу эсереп, тәненә дарыу ебәреп, балаларҙы йәшәтергә теше-тырнаҡтары менән йәбешеп яталар.* М. Тажи.

**2.** Тыныс йәшәргә ирек биреү. *Төймәләй ҙә минең башымды йәшәтмәҫ булдың, атаҡайым* (Сеңләүҙән). *[Батша кәңәшсеһе:] Был ике әҙәм балаһы беҙҙе имен йәшәтмәҫ* (Әкиәттән).

**ЙӘШӘҮ** *к.* **1.** Тереклек итеү, тереклек һаҡлау. *Оҙаҡ йәшәү.* ■ *Юламан ҡарт .. ваҡыт-ваҡыт хатта үҙен дә онота кеүек, бына-бына диңгеҙгә ҡолап төшөр ҙә, бер ҡасан да йәшәмәгән кеүек, юҡ та булыр кеүек.* З. Биишева.

**2.** Ғүмер үткәреү, ғүмер һөрөү. *Ауылда йәшәү. Бергә йәшәү.* ■ *Сәгиҙә был ауылда гүмер буйы йәшәрмен тип башына ла килтермәй ине.* М. Тажи. *Күп йәшәгән былар, тибеҙ, әгәр күрһәк сал карттарҙы.* Х. Кәрим. *Борон заманда Ҡариҙел башындағы ҡалын урман араһында йәшәгән, ти бер батыр* (Әкиәттән).

**3.** Донъя көтөү, көн итеү. *Донъя рәхәтендә йәшәү. Маҙырап йәшәү. Хәлле йәшәү.* ■ *Таңатар үлгәс, ике ырыу бик дуҫ йәшәгән. Ят халыҡтарҙың һөжүменән дә бергәләп ҡурсалашыр булғандар.* Ә. Вахитов. *[Урал:] Ер-һыу үлемһеҙ булһын, кеше шат, рәхәт йәшәһен.* «Урал батыр».

**4.** *күсм.* Онотолмай тороу, онотолмау, һаҡланыу.— *Бөгөн ул хикәйәтте мин һиңә һөйләйем. Әгәр иғтибарға лайыҡ тапһаң, бәлки бер саҡ уны һин дә берәйһенә һөйләрһең. .. Быны шулай йәшәй бит инде ул арыу хикәйәттәр.* З. Биишева. *Һәр саҡ: йөрөгәндә лә, осҡанда ла йөрәгемдә йәшәй дуҫтарым.* Р. Ғарипов.

**5.** Сифат ҡылымдың *-ғр* формаһында һан менән бергә килеп, йәште белдерә. *Йөҙ йәшәр әбей.*

◆ **Ашың ашаған, йәшең йәшәгән** бик оло кеше үлгәндә йәки оҙаҡ үлмәй йөрөгәндә әйтелә. **Йәшә!** маҡтағанда, һоҡланып ҡотлағанда әйтелә. [*Юлия:*] *Бик дөрөҫ аңлайһың, Ишбулды, бик дөрөҫ эшләйһең. Йәшә, туғанкайым!* Һ. Дәүләтшина. **Йәшәй ҙә китә** берәү бер нәмәгә кыуанып, маһайып китер булғанда әйтелә.— *Ҡомартҡыларын һанларҙай кеше килһә, йәшәй ҙә китә ул Хасбулат апам.* З. Биишева. **Йәшәһен!** данлау, ҡотлау һүҙҙәрендә, лозунгыларҙа әйтелә. *Көслө эш, ныҡлы эш — берлектә. Берлектә! Йәшәһен элемтә!* Ғ. Амантай. **Күп (йәки йөҙ) йәшә!** берәүҙе ныҡ маҡтағанда, ҡотлағанда әйтелә. *[Ҡарт:] Ҡашҡа ир икәнһең, кейәү! Йөҙ йәшә!* (Әкиәттән). **Тиң йәшәгеҙ** өйләнешкән кешеләргә теләк итеп әйтелә.

● *Алты йәшәр юлдан ҡайтһа, алтмыш йәшәр күрә барыр.* Әйтем. *Күп йәшәгән ни белгән, күпте күргән — шул белгән.* Мәҡәл.

**ЙӘШӘҮСЕ** *и.* Ҡайҙалыр йәшәгән, торған кеше. *Ауылда йәшәүсе. Ҡалала йәшәүселәр.* // *Ә батша, донъяла минән дә яҡшы йәшәүсе кеше булмаҫҡа тейеш, тип йәшәүсе ҡара эсле, көнсөл бер нәмә булған* (Әкиәттән).

**ЙӘШӘҮСӘН** *с.* Йәшәүгә һәләтле, бирешмәй торған. *Йәшәүсән булыу. Йәшәүсән итеү.*

**ЙӘШӘҮСӘНЛЕК** *и.* Йәшәүгә һәләтлек. *Уның [Маяковскийҙың] ижадында ҙур идеяларҙың яңы формалары ҙур поэтик көс менән яңғырауы уның әҫәрҙәренең йәшәүсәнлек көсөн билдәләне.* Ғ. Хөсәйенов. *Ғөмүмән, катын-ҡыҙ ижады йәшәүсәнлеге менән айырылып тора. Оҙаҡ йәшәүгә һәләтлек катын-ҡыҙ сәнгәтенең көндәлек тормош, бигерәк тә көнкүреш йолалары менән тығыҙ бәйләнештә булыуынан килә, ахыры.* Н. Бикбулатов.

**ЙӘЬЖҮЖ** [*ғәр.*] *и. ҡар.* **мәжүси.**

**ЙӘЬЖҮЖЛЕК** *и. ҡар.* **мәжүсилек.** *Сирмештәр, арҙар ҙа бик асыулы. Уларҙың йәьжүжлектәренә лә көн юк.* Ғ. Ибраһимов.

**ЙӘЬЖҮЖ-МӘЬЖҮЖ** [*ғәр.*] *и.,* **йәьжүж вә мәьжүж** *иҫк. кит.* Дини ҡарашса, ерҙе ябып, донъяны ҡырып килгән бик яман, ҡырағай ике халыҡ. *[Бибисара абыстай — Тайба әбейгә:] Ҡоҙағый, шуны әйтәм әле, ахры заман еткәс, ҡиәмәт ҡупҡас, ергә йәьжүж-мәьжүждәр сығыр, ти.* З. Биишева.

# К

**К** [ка] Башҡорт алфавитының ун дүртенсе хәрефе.

**КАБАЛА́** [*рус.*] *и.* Бойондороҡ, ҡоллоҡ.

**КАБАРДА** *и.* Кабарда-Балҡар АССР-ның төп халҡы һәм шул халыҡтың бер кешеһе (иберий-кавказ телдәренең береһендә һөйләшә). *Кабарда халҡы. Кабарда ҡатыны. Кабарда теле.*

**КАБАРЕ́** [*рус.* ⟨ *фр.*] *и.* Буржуаз илдәрҙә: эстрадалы бәләкәй ресторан.

**КА́БЕЛЬ** [*рус.* ⟨ *гол.*] *и.* Ер йәки һыу аҫтынан ток ебәреү, элемтә булдырыу, төрлө сигнал, хәбәр биреү һ. б. өсөн тышҡы тәьҫиргә бирешмәҫлек итеп махсус көпләнгән, изоляторлы электр сымы. *Кабель заводы. Ер аҫты кабеле. Телефон кабеле. Электр кабеле. Кабель үткәреү.* ■ *Юл буйлап блиндаждан элемтә кабеле һуҙыла.* Ә Хәкимов.

**КАБИ́НА** [*рус.* ⟨ *фр.*] *и.* Бәләкәй генә махсус бүлмә. *Герметик кабина. Душ кабинаһы. Самолёт кабинаһы.* ■ *Ҡул күтәргәс, машина яйланы. Кабинанан шофёрҙың йөҙө күренде.* Ф. Иҫәнғолов.

**КАБИНЕ́Т** [*рус.* ⟨ *фр.*] *и.* **1.** Өйҙә йәки эш урынындағы махсус эш бүлмәһе. *Директор кабинеты. Председатель кабинеты.*

**2.** Айырым бер эш өсөн йыһазландырылған бүлмә. *Рентген кабинеты. Физкультура кабинеты. Химия кабинеты.*

**3.** Ҡайһы бер илдәрҙә: хөкүмәттәге министрҙар составы. *Министрҙар кабинеты. Яңы кабинет төҙөү.*

**КАБЛОГРА́ММА** [*рус.* ⟨ *фр.*] *и. махс.* Һыу аҫты кабеле аша бирелгән телеграмма.

**КАБОТА́Ж** [*рус.* ⟨ *фр.*] *и. диңг.* Бер илдең порттары араһындағы суднолар йөрөшө. **Бәләкәй каботаж** бер диңгеҙ порттары араһындағы суднолар йөрөшө. **Ҙур каботаж** бер нисә диңгеҙ порттары араһындағы суднолар йөрөшө.

**КАБРИОЛЕ́Т** [*рус.* ⟨ *фр.*] *и.* **1.** Бер генә ат егелә торған ике тәгәрмәсле еңел арба.

**2.** Еңел автомобилдең асылмалы кузовы.

**КАВАЛЕ́Р** [1] [*рус.* ⟨ *фр.*] *и.* **1.** Ҡатын-ҡыҙ менән ҡушлап бейегән ир.

**2.** *һөйл.* Ҡатын-ҡыҙ менән йөрөгән ир-ат. *Хәҙер беҙҙе яратҡан ҡыҙҙар бар. Беҙ хәҙер — кавалер.* Д. Юлтый.

**КАВАЛЕ́Р** [2] [*рус.* ⟨ *ит.*] *и.* Ордены булған кеше. *«Алтын йондоҙ» кавалеры. Ленин ордены кавалеры.*

**КАВАЛЕРИ́СТ** [*рус.*] *и.* Кавалерияла хеҙмәт иткән һалдат; атлы һалдат. *Кавалеристар полкы.* ■ *Ырғып менә, һикереп төшә кавалерист аттарға* (Халыҡ йырынан).

**КАВАЛЕ́РИЯ** [*рус.* ⟨ *фр.*] *и.* Атлы ғәскәр. *Кавалерияла хеҙмәт итеү. Кавалерия һөжү-*

*те.* ■ *112-се Башҡорт кавалерия дивизияһы ойошторолоп, 1942 йылдың апрель айында фронтҡа оҙатылды.* «Совет Башҡортостаны», 1965, 6 май.

**КАВАЛЬКА́ДА** [*рус.* ⟨ *фр.*] *и.* Йөрөргә сыҡҡан һыбайлылар төркөмө. *Байрам көндәрендәге кавалькада, һыбайлы спорт ярыштары әле булһа күҙ алдымдан китмәй.* С. Кулибай.

**КАВАТИ́НА** [*рус.* ⟨ *ит.*] *и.* Операла моңға бай бәләкәй лирик ария.

**КАВЕ́РНА** [*рус.* ⟨ *лат.*] *и.* **1.** *мед.* Эске ағза туҡымаһында ниндәйҙер сир һөҙөмтәһендә барлыҡҡа килгән ҡыуыш урын; ҡыуышлыҡ.

**2.** *геол.* Тау тоҡомонда барлыҡҡа килгән ҡыуыш, буш урын; ҡыуышлыҡ.

**КАГА́Т** [*рус.*] *и. а. х.* Ҡыш һаҡлар өсөн өҫтән ҡаплап ҡуйылған тамыр аҙыҡ (картуф, кишер, сөгөлдөр һ. б.) өйөмө.

**КАГАТЛАУ** *ҡ.* Кагатҡа өйөү. *Картуфты кагатлау.*

**КАГО́Р** [*рус.* ⟨ *фр.*] *и.* Виноград һутынан яһалған шәрбәтле ҡыҙыл араҡы.

**КАДЕ́Т** [1] [*рус.* ⟨ *фр.*] *и.* революцияға тиклемге Россияла: кадеттар корпусының уҡыусыһы.

♦ **Кадеттар корпусы** Революцияға тиклемге Россияла: дворян балаларын офицерлыҡҡа әҙерләй торған ябыҡ урта хәрби уҡыу йорто.

**КАДЕ́Т** [2] [*рус.*] *и.* Россияла 1905 йылда барлыҡҡа килеп, конституцион-демократик партия тип аталған 1917 йылда контрреволюцион хәрәкәткә етәкселек иткән буржуаз партия ағзаһы.

**КА́ДМИЙ** [*рус.* ⟨ *лат.*] *и.* Химик элемент, цинк рудаһында була торған көмөш аҡ төҫтәге йомшаҡ металл.

**КАДР** [1] [*рус.* ⟨ *фр.*] *и.* **1.** Киноплёнка йәки фотоплёнкалағы бер һүрәт.

**2.** Кинофильмдағы бер күренеш.

**КАДР** [2] [*рус.* ⟨ *фр.*] *и.* **1.** Тыныс ваҡытта ла демоблизацияға эләкмәгән даими ғәскәр составы. *Кадрҙа ҡалыу.*

**2.** *гәҙиттә ҡулл.* Берәй учреждение, предприятие, ойошма йәки профессия кешеләренең әҙерлекле төп составы.

**КАДРҘАҒЫ** *с.* Тыныс ваҡыттағы даими ғәскәрҙә хеҙмәт иткән. *Кадрҙағы офицер.*

**КАДРИ́ЛЬ** [*рус.* ⟨ *фр.*] *и.* Алты фигураға ҡоролған ҡушар бейеү һәм шул бейеүҙең көйө.

**КАДРОВИ́К** [*рус.*] *и. һөйл.* Төп хеҙмәткәрҙәр, кадрҙар иҫәбенә ингән кеше.

**КА́ДРОВЫЙ** [*рус.*] *с. ҡар.* **кадрҙағы.**

**КАЖАН** [*рус.* кожан] *и.* Күн пальто. *Кажан кейеү.*

**КАЗА́К** [*рус.* ⟨ *төрк.*] *и. ҡар.* **ҡазаҡ.**

**КАЗА́РКА** [*рус.*] *и.* Өйрәктәр ғаиләһенә ингән тундра ҡошо.

**КАЗА́РМА** [*рус.* ⟨ *ит.*] *и. ҡар.* **ҡаҙарма.**

**КАЗЕ́ЙН** [*рус.* ⟨ *лат.*] *и.* Һөттөн эреткәндә бүленеп сыҡҡан аҡһым матдәһе (буяу, пластмасса, елем һ. б. нәмә яһау өсөн ҡулланыла).

**КАЗЕМА́Т** [*рус.* ⟨ *фр.*] *и.* **1.** Артиллерия һәм авиация утынан һаҡланыу өсөн ер аҫтына йәки ер өҫтөнә эшләнгән ҡоролма.

**2.** Төрмәләге айырым камера. *Салауат Юлаев һәм Юлай Аҙналинды Рогервикка 1775 йылдың 29 ноябрендә килтереп еткерәләр һәм крепость башняһының казематына мәңгелеккә ябып ҡуялар.* Ә. Харисов.

**КАЗЁНКА** [*рус.*] *и.* Һал өҫтөндәге өй. *Һал ағыҙыусылар .. өҫ кейеме, плащ-палатка, казёнка һәм кәмәләр менән тәьмин ителде.* «Совет Башҡортостаны», 1968, 24 апрель.

**КАЗЁНЩИНА** [*рус.*] Эштең асылын билдәләүҙән ситтә торған формаль ҡараш, формаль мөнәсәбәт.

**КАЗИНО́** [*рус.* ⟨ *фр.*] *и.* Көнбайыш Европала: ҡала ситендә, курорттарҙа була торған рестаранлы кәйеф-сафа һәм ҡомарлы уйын йорто.

**КАЗНАЧЕ́Й** [*рус.*] *и.* **1.** Ойошма йәки учреждениеның аҡсаһын һәм баһалы нәмәләрен һаҡлаусы. *Профком казначейы.*

**2.** Армияла частың аҡса, кейем-һалым, ашамлыҡ кеүек нәмәләрен һаҡлау һәм өләшеү эштәрен башҡарыусы кеше.

**КАИНАТ** [*ғәр.*] *и. иҫк.* Бөтә донъя. *Әйҙә, иҫ, ел! Дөрлә, ялҡын! Бар каинат ҡайнаһын!* Ш. Фидаи.

**КАЙМА́Н** [*рус.* ⟨ *исп.*] *и.* Үҙәк һәм Көньяҡ Америкала йәшәгән крокодил төрө.

**КАЙНОЗО́Й** [*рус.* ⟨ *гр.*] *и.*, **кайнозой дәүере** Ерҙең геологик тарихындағы иң яңы дәүер.

**КА́ЙРА** [*рус.*] *и.* Ҡара арҡалы, аҡ ҡорһаҡлы төньяҡ диңгеҙ ҡошо.

**КАКАДУ́** [*рус.* ⟨ *нем.*] *и.* Бүрекле тутыйғош төрө. *Ҡара какаду.*

**КАКА́О** [*рус.* ⟨ *исп.*] *и.* **1.** Орлоғонан шоколад эшләнә торған тропик ағас. *Какао ағасы. Какао орлого. Какао плантацияһы.*

**2.** Шул ағас орлоғонан эшләнгән онтаҡ. *Какао эшләү.*

**3.** Шул онтаҡтан ҡайнатҡан эсемлек. *Бер стакан какао. Какао ҡайнатыу.*

**КАКОФО́НИЯ** [*рус.* ⟨ *гр.*] *и.* Ҡолаҡ ярғыс йәмһеҙ тауыштар; аһәңһеҙлек.

**КА́КТУС** [*рус.* ⟨ *лат.*] *и.* Итләс һабаҡлы, сәнскәклә көньяҡ үҫемлеге.

**КАЛАМАШКА** [*рус.* колымага] *диал.* Келәймәк.

**КАЛАМБУ́Р** [*рус.* ⟨ *фр.*] *и.* Төрлө мәғәнәләге ауаздаш һүҙҙәрҙә йәки бер үк һүҙҙең төрлө мәғәнәһен ҡулланыуға ҡоролған йор һүҙ (мәҫ. кискелеккә ҡабырға бүре тапты ҡабырға).

**КАЛА́Н** [*рус.*] *и. ҡар.* **ҡамсат.**

**КАЛАНЧА́** [*рус.*] *и. ҡар.* **ҡаланса.**

**КАЛЕЙДОСКО́П** [*рус.* ⟨ *гр.*] *и.* Эсенә төрлө төҫтәге быяла ярсыҡтары һалып, өс ҡырлап яһалған торба рәүешендәге оптик прибор (әйләндергән һайын яңы биҙәк барлыҡҡа килә).

**КАЛЕНДА́РЬ** [*рус.* ⟨ *лат.*] *и.* **1.** Йылдың һәр көнөн тәртип менән теҙеп, айға, аҙнаға бүлеп төҙөгән белешмә. *Өҫтәл календары. Йыртмалы календарь.* / Йылдағы көн тәртибе ыңғайына һалып, төрлө тәбиғәт күренеше йәки башҡа нәмә тураһында мәғлүмәт биргән белешмә. *Астрономик календарь. Ҡатын-ҡыҙ календары. Баксасы календары.*

**2.** Күк есемдәренең хәрәкәте менән бәйле периодик тәбиғәт күренештәре нигеҙендә оҙайлы ваҡыт араһын иҫәпләү системаһы. **Ай календары** ай һәм йыл оҙонлоғон Ай хәрәкәтенән сығып иҫәпләгән календарь (иҫәп Мөхәммәттең Мәккә-

нән Мәҙинәгә күскән көнөнән башланып, ун ике айға бүленеп йөрөтөлә, исемдәре: мөхәррәм, сәфәр, рабиғыләүүәл, рабиғылахыр, йомадиәлеәүәл, йомадиәлахыр, рәжәп, шәғбан, рамазан, шәүүәл, зөлҡәғиҙә, зөлхизә). **Григорий календары** Рим папаһы Григорий XIII тарафынан Юлий календарын төҙәтеү өсөн индереп, йыл башын ун көнгә алға күсергән календарь (яңы стиль). **Ҡояш календары** ай һәм йыл оҙонлоғон Ҡояш хәрәкәтенән сығып иҫәпләгән календарь (иҫке һәм яңы стиль календарҙары). **Юлий календары** Юлий Цезарь тарафынан индерелеп, йыл оҙонлоғон 365 1/4 тәүлектән иҫәпләгән календарь (иҫке стиль).

♦ **Календарь йылы** *кар.* **йыл.**

**КАЛИ́БР** [*рус.* ⟨ *фр.*] *и.* **1.** Ата торған ҡорал көбәгенең эске диаметры. *Бәләкәй калибрлы мылтыҡ. Ҙур калибрлы туп.* / Пуля йәки снарядтың диаметры. *16 калибрлы пуля.*

**2.** *тех.* Эшләнгән нәмәнең, деталдең, тейешле дәүмәле.

**3.** *тех.* Эшләнгән нәмәнең дәүмәлен, формаһын үлсәй торған ҡорамал. *Калибр менән үлсәү.*

**КАЛИБРЛАНЫУ** *к. төш. кар.* **калибрлау.** *Калибрланған орлоҡ.*

**КАЛИБРЛАУ** *к.* **1.** Тейешле калибрға килеүкилмәүен билдәләү.

**2.** Тейешле эрелектәге орлоҡтарҙы айырыу. *Орлоҡтарҙы калибрлау мөһим шарт. Сәсеү орлоғо ни ҡәҙәре эре булһа, шул ҡәҙәре ышаныслыраҡ.* «Совет Башҡортостаны», 1965, 13 ноябрь.

**КА́ЛИЙ** [*рус.* ⟨ *гәр*] *и.* Химик элемент, поташтан алынған көмөш аҡ төҫтәге металл.

**КАЛИЙЛЫ** *с.* Составында калий булған. *Калийлы ашламалар.*

**КАЛЛИГРА́Ф** [*рус.*] *и.* Матур, асыҡ итеп яҙған кеше. *Уҡымышлы каллиграфтарҙың кайһы берҙәре китапты күсереп яҙыу менән генә сикләнеп ҡалмаған.* Ә. Харисов.

**КАЛЛИГРА́ФИК** *с.* Матур, асыҡ итеп яҙылған. *Каллиграфик яҙыу.*

**КАЛЛИГРА́ФИЯ** [*рус.* ⟨ *гр.*] *и.* Матур-асыҡ яҙыу оҫталығы. *Балаларҙы дөрөҫ каллиграфияға өйрәтеү.*

**КАЛОРИЙ** *и. һөйл. кар.* **калория.**

**КАЛОРИ́МЕТР** [*рус.* ⟨ *лат.*] *и.* Есемдәр биргән йәки йыйған йылылыҡ миҡдарын үлсәү ҡорамалы.

**КАЛОРИМЕ́ТРИЯ** [*рус.*] *и.* Төрлө физик йәки химик процесса бүленеп сыҡҡан йәки йотолған йылылыҡ миҡдарын үлсәү ысулдары.

**КАЛОРИ́ФЕР** [*рус.* ⟨ *лат.*] *и.* Ҡайнар һыу, пар, төтөн йөрөгән торбалар ярҙамында биналағы һауаны йылыта торған прибор. *Пар калориферы. Электр калориферы.*

**КАЛО́РИЯ** [*рус.* ⟨ *лат.*] *и.* Йылылыҡ миҡдарын үлсәй торған, бер системаға ла инмәгән берәмек.

**КАЛОРИЯЛЫ** *с.* Калорияһы күп, калорияға бай. *Калориялы аҙыҡ. Калориялы яғыулыҡ.*

**КАЛОРИЯЛЫЛЫҠ** *и.* **1.** Бер килограмм ҡаты яғыулыҡ, йә булмаһа бер куб метр газ яндырғанда барлыҡҡа килгән йылылыҡ миҡдары (калория менән билдәләнә). *Күмерҙең калориялылығы.*

**2.** Бер грамм аҙыҡ иҫәбенә тере организмда барлыҡҡа килгән калория менән билдәләнгән энергия миҡдары. *Аҙыҡтың калориялылығы.*

**КАЛУШ** [*рус.* галоши ⟨ *фр.*] *и.* Һыу үтмәһен өсөн аяҡ кейеме өҫтөнән кейелә торған резина ҡата. *Быйма калушы. Ҡуныслы калуш.* **Үзбәк калушы** йөҙлөклө, осло моронло һай калуш.

♦ **Калуш быйма** *кар.* **быйма. Калуш ҡата** ҡуныслы күн ҡата.

**КА́ЛЬКА** [*рус.* ⟨ *фр.*] *и.* **1.** Үтә күренмәле йоҡа ҡағыҙ йәки туҡыма (һүрәт һәм һыҙмалар күсермәһен алыу өсөн ҡулланыла). *Калькаға күсереү. Кальканан төшөрөү.*

**2.** *лингв.* Сит телдәге һүҙҙе туранан-тура тәржемә итеп яһаған яңы һүҙ (мәҫ. «надстройканан» күсерелгән «өҫҡорма»).

**КАЛЬКАЛА́ШТЫРЫУ** *к.* **1.** Калькаға (1 мәғ.) төшөрөү. *Һүрәтте калькалаштырыу.*

**2.** *лингв.* Икенсе бер телдән туранан-тура тәржемә итеп һүҙ яһау. *1925—29 йылдарҙа калькалаштырыу юлы менән яңы һүҙ яһау беҙҙең тел практикаһында әле бөтөнләй булмаған.* «Совет Башҡортостаны», 1966, 7 июль.

**КАЛЬКУЛЯ́ТОР** [*рус.*] *и.* Калькуляция яһау белгесе.

**КАЛЬКУЛЯ́ЦИЯ** [*рус.* ⟨ *лат.*] *и. махс.* Эшләп сығарылған нәмәнең үҙенә төшкән хаҡын һәм һатыу хаҡын иҫәпләү эше. *Калькуляция яһау.*

**КАЛЬМА́Р** [*рус.* ⟨ *фр.*] *и.* Ун һәрмәүесле эре диңгеҙ әкәм-төкәме.

**КА́ЛЬЦИЙ** [*рус.* ⟨ *лат.*] *и.* Химик элемент, аҡбур, мәрмәр һ. б. таштар эсенә ингән көмөш аҡ төҫтәге металл. *Бромлы кальций. Кальций тоҙо.*

**КАЛЬЦИЙЛАНЫУ** *к. төш. кар.* **кальцийлау.** *Кальцийланған сода.*

**КАЛЬЦИЙЛАУ** *к.* Кальцинация яһау.

**КАЛЬЦИЙЛЫ** *с.* Составында кальций булған. *Кальцийлы ашлама.*

**КАЛЬЦИНА́ЦИЯ** [*рус.*] *и. хим.* Есемде әсетеү йәки тарҡатыу өсөн ҡыҙҙырыу йәки яндырыу эше.

**КАЛЬЦИ́Т** [*рус.* ⟨ *лат.*] *и.* Әзбиз, мәрмәр таштарының эсенә ингән минерал; әзбиз шпаты.

**КА́МБАЛА** [*рус.* ⟨ *фин.*] *и.* Ике күҙе лә бер яҡта булған яҫы ялпаҡ диңгеҙ балығы.

**КА́МБИЙ** [*рус.* ⟨ *лат.*] *и. кар.* **сөсөк.**

**КА́МБУЗ** [*рус.* ⟨ *гол.*] *и.* Караптың аш-һыу бүлмәһе.

**КАМВОЛЬ** [*рус.* камвольный ⟨ *нем.*]: **камволь еп** аялап, тарап иләгән йөн еп. **Камволь туҡыма** шул ептән һуғылған юғары сифатлы туҡыма. **Камволь фабрикаһы** камволь еп һәм камволь туҡыма эшләгән фабрика.

**КАМЕ́ЛИЯ** [*рус.* ⟨ *фр.*] *и.* Ҡыҙыл йәки аҡ төҫтәге хуш еҫле, эре сәскәле, ҡаты ҡалын япраҡлы йылы яҡ ағасы.

**КА́МЕРА** [*рус.* ⟨ *лат.*] *и.* **1.** Ҡайһы бер учреждениеларҙа махсус айырым бүлмә. *Багаж һаҡлау камераһы. Дезинфекция яһау камераһы.* / Төрмәләге бер кешелек бүлмә. *Хисмәтулланы ҡараңғы камераға индереп бикләнеләр.* Я. Хамматов.

**2.** *махс.* Берәй машина, ҡорамал, ҡоролма

эсендәге ябыҡ урын, бүлек. *Вакуумлы камера. Шлюз камераһы.*

**3.** Шина, туп кеүектәрҙең һауа тултырыла торған, резинанан ғибәрәт эске ҡаты.

**4.** Фотоаппараттың плёнка, пластинка ҡуя торған эске өлөшө.

**КАМЕРАЛЬ** [*рус.* камеральный] *с. махс.* Кабинетта, лабораторияла алып барылған (экспедицияла йыйылған материалды ғилми яҡтан эшкәртеүгә ҡарата). *Камераль эштәр.*

**КА́МЕРНЫЙ** [*рус.*] *с.* Солист музыкант йәки айырым ансамбль башҡарыу өсөн тәғәйенләнгән. *Камерный музыка.* / Ошондай әҫәрҙе башҡарыусы. *Камерный ансамбль.*

**КАМЕРТО́Н** [*рус.* ⟨ *нем.*] *и.* Ҡаты нәмәгә һуҡҡанда билдәле бер юғарылыҡта тауыш бирә торған ике саталы ҡорос ҡорал (музыка ҡоралдарын көйләгәндә ҡулланыла).

**КА́МЕР-ЮНКЕР** [*рус.* ⟨ *нем.*] *и.* Революцияға тиклемге Россияла һәм ҡайһы бер монархистик илдәрҙә: батша һарайындағы иң бәләкәй дәрәжә һәм шул дәрәжәләге кеше.

**КАМЗУЛ** [*рус.* камзол ⟨ *фр.*] *и.* Биллән, эсләп тегелгән еңһеҙ ҡыҫҡа кейем. *Бәрхәт камзул. Ҡара сатин камзул.* ■ *Бишбилле ҡыҙыл соға камзул [Емештең] нескә билле зифа буйына килешеп кенә тора.* З. Биишева. **Ирҙәр камзулы** түңәрәк текә яғалы, бер нисә төймәле, тура билле, биҙәүһеҙ камзул. **Ҡыҙҙар камзулы** өҙөлөп торған билле, асыҡ иҙеүле, бер генә төймәле, ука-тәңкә ҡырпыулы камзул. **Әбейҙәр камзулы** асыҡ иҙеүле, бер генә төймәле, уҡалы камзул.

**КАМИЛ** [*ғәр.*] *с.* **1.** Сифат кимәле тейешле дәрәжәлә булған. *Камил кеше. Иҫ-аҡылы камил. Камил булыу.* ■ *Большевиктар әйтә: «Һәр бер илгә камил мөхтәриәт бирелһен».* Ш. Бабич.

**2.** *р. мәғ.* Тулы, теүәл. *Кусәк менән Тойғон Ураз ханда камил ике йыл тороп, әҙерләнеп .. яуға сыҡты* (Әкиәттән).

**3.** *р. мәғ.* Бөтөнләй, тамам. *Камил арытты. Камил аяҡтан яҙҙым. Камил теңкәгә тейҙең. Камил ышандыҡ.* ■ *Бына директор менән агроном[дың] .. камил юл өҙөлөр мәл еткәс, орлоҡ алыштырыу иҫтәренә төшкән.* Ф. Иҫәнғолов.

**4.** (*баш хәреф менән*) Ир-ат исеме.

◆ **Иман** (*йәки* **иманым**) **камил** *ҡар.* **иман** 1.

**КАМИЛЛАУ** *ҡ.* Башҡарыу, үтәү. *Һинең һүҙеңде беҙ камиллай алмайбыҙ.* «Батыршаның хаты».

**КАМИЛЛАШТЫРЫУ** *ҡ.* Камил хәлгә килтереү, камил итеү; яҡшыртыу. *Уҡытыусыларҙың белемен камиллаштырыу институты.* ■ *Халыҡ хужалығына идара итеүҙе камиллаштырыу партияның экономик стратегияһының мөһим үҙенсәлеге.* «Совет Башҡортостаны», 1985, 11 ноябрь.

**КАМИЛЛАШЫУ** *ҡ.* Камил хәлгә килеү, үҫеү процесында яҡшырыу, һәйбәтләнеү. *Белеме камиллашты. Техник яҡтан камиллашыу.* ■ *[Һөнәрсе] һәр ваҡыт эҙләнгән, өйрәнгән. Шуға ахры, ул үҙ һөнәрендә көндән-көн үҫкән, камиллашҡан.* З. Биишева.

**КАМИЛЛЫК** *и.* Камил хәл, теүәллек. *[Йәштәрҙең] эшендә һәм һүҙендә .. уҡыуға, белемгә, камиллыҡҡа ынтылыштары һиҙелеп тора.* Р. Ниғмәти. *Һабрауҙың үҙе сығарған шиғырҙары камиллыҡтан алыҫ ине әле.* Ә. Хәкимов.

**КАМИ́Н** [*рус.* ⟨ *гр.*] *и.* Киң ауыҙлы мейес; сыуал. *Камин рәшәткәһе.*

**КАМИР: камир һыуыҡ** *диал.* ҡыраулы һыуыҡ.

**КАМПА́НИЯ** [*рус.* ⟨ *фр.*] *и.* **1.** *хәрби* Билдәле бер ваҡытта айырым бер урында дөйөм маҡсат менән башҡарылған киң күләмле хәрби сара. *Совет Армияһының 1942-43 йылдағы ҡышҡы кампанияһы.*

**2.** Хәрби диңгеҙ флотының өҙлөкһөҙ йөҙгән ваҡыт араһы. *Йәйге кампания.*

**3.** Ижтимағи-политик йәки хужалыҡ бурыстарын бойомға ашырыу өсөн билдәле бер ваҡытта алып барылған эш. *Газет-журналдарға яҙылыу кампанияһы. Һайлау алды кампанияһы. Яҙғы сәсеү кампанияһы.*

**КАМПУЧИ** *и.* Кампучияның төп халҡын тәшкил иткән милләт һәм шул милләттең бер кешеһе.

**КАМСА** *и. ҡар.* **ҡамса.**

**КАМФАРА́** [*рус.* ⟨ *гр.*] *и.* Ҡырҡыу еҫле төҫһөҙ кристаллик матдә (медицина һәм техникала ҡулланыла). *Камфара майы.*

◆ **Камфара ағасы** лавр һымаҡтар ғаиләһенә ҡараған мәңге йәшел ағас.

**КАМФАРАЛЫ** *с.* Составында камфара булған. *Камфаралы спирт.*

**КАМФАРКА** [*рус.* конфорка ⟨ *гол.*] *и.* **1.** Самауырҙың сәйгүн ултыра торған иң өҫкө өлөшө. [*Әсмә апай*] *самауыр .. ҡапҡасын шап иттереп япты ла сәйгүнде камфарка өҫтөнә ҡуйҙы.* Х. Мохтар.

**2.** Плитала газ яна торған урындағы тишекле тупалсаҡ. *Ике камфаркалы плита.*

**3.** *кусм. һөйл.* Күлдәк еңенең бөрөп, ҡабартып тегелгән осо. *Камфаркалы ең.*

**КАМФАРКАЛАУ** *ҡ.* Камфарка (3 мәғ.) ҡуйыу, камфаркалы итеү. *Еңде камфаркалап тегеү.*

**КАМЧАДА́Л** [*рус.*] *и. иҫк.* Ительмән.

**КАМЫШИ́Т** [*рус.*] *и. махс.* Ҡамышты преста ҡыҫып, тимер сыбыҡ менән бәйләп эшләгән төҙөлөш материалы. *Камышиттан мал аҙбары эшләү.* // *Камышит йорт.*

**КАНА́Л** [*рус.* ⟨ *фр.*] *и.* Айырым һыу ятҡылыҡтарын тоташтырыу йәки ер һуғарыу өсөн эшләнгән яһалма һыу юлы. *Волга-Дон каналы. Ер һуғарыу каналдары. Канал йырыу. Канал ҡаҙыу.*

**КАНАЛИЗА́ЦЯ** [*рус.*] *и.* Торлаҡлы ерҙән бысраҡты ағыҙыу һәм уны таҙартыу өсөн ер аҫтынан үткәрелгән торбалар системаһы. *Канализация үткәреү. Канализация таҙартыу.*

**КАНАРЕ́ЙКА** *и. ҡар.* **кәнәри.**

**КАНА́Т** [*рус.*] *и.* Йыуан сүс йәки ҡорос арҡан.

**КАНАУ** [*рус.* канава] *и.* Ҡаҙылған оҙон тар соҡор. *Тәрән канау. Канау йырыу. Канау ҡаҙыу. Канау ҡаҙғыс.* ■ *Ауылдың уртаһынан ян-ягы канаулы ҡырсын төшәгән юл үтә.* Ж. Кейекбаев.

**КАНАУЫС** [*фарс.*] *и.* Беше ебәк туҡыма.

**КАНВА́** [*рус.* ⟨ *фр.*] *и.* Сигеү өсөн ерлек итеп ҡулланыла торған һирәк туҡыма. *Вак канва. Канваға сигеү.*

**КАНДАЛ** [*рус.* кандалы ⟨ *гәр.*] *и. һөйл.* Аяҡ-ҡулға һалына торған бығау. *Баш китеүкәйҙәре ауыр түгел, ауыр кандал менән әйләүе* (Халыҡ йырынан).

**КАНДАУАЙ** [*рус.* кондовый] *и. һөйл.* Йыуан ҡаты үҙәкле төҙ ҡарағай йәки ҡарағас ағасы.

**КАНДИДА́Т** [*рус.* ⟨ *лат.*] *и.* **1.** Ниндәйҙер эшкә, нимәнелер алырға, ҡайҙалыр һайланырға һ. б. тәғәйенләнгән, билдәләнгән кеше. *Депутатлыҡҡа кандидат. Президентлыҡҡа кандидат.*

**2.** Кесе ғилми дәрәжә һәм шул дәрәжәне алған кеше. *Медицина фәндәре кандидаты. Филология фәндәре кандидаты. Кандидат дипломы.*

**КАНДИДАТЛЫҠ** *и.* Кандидат булған хәл. *Кандидатлыҡ стажы. Кандидатлыҡ диссертацияһы.*

♦ **Кандидатлыҡ минимумы** диссертация әҙерләү өсөн кәрәк булған белем күләмен күрһәткән һынау. *Кандидатлыҡ минимумы тапшырыу.*

**КАНДИДАТУ́РА** [*рус.*] *и.* **1.** Кандидат (1 мәғ.) итеп күҙҙә тотолған кеше. *Эшкә кандидатура табыу. Кандидатура күрһәтеү.*

**2.** *кар.* **кандидат** 1. *Кемдеңдер кандидатураһын яҡлау.*

**КАНИКУЛ** [*рус.* каникулы ⟨ *лат.*] *и.* Уҡыусыларҙың уҡыуҙан туҡтап ял иткән ваҡыты. *Йәйге каникул. Ҡышҡы каникул. Яҙғы каникул. Каникул башланыу. Каникулға туҡтау.* ■ *Ике-өс айлыҡ каникул йәлп итеп үтеп тә китә; һиҙмәй ҙә ҡалаһың, күҙө лә килеп етә.. Шунан йәнә уҡыу.* Ж. Кейекбаев.

**КАНИСТР** [*рус.* канистра ⟨ *ингл.*] *и.* Ныҡ ябыла торған тар ауыҙлы, ялпаҡ һауыт (шыйыҡлыҡ һалыу өсөн ҡулланыла). *Алюмин канистр. Полиэтилен канистр. Бензин канистры.*

**КАНИФА́С** [*рус.* ⟨ *нем.*] *и. иҫк.* Боронғо беше мамыҡ туҡыма. //*Канифас күлдәк.*

**КАНИФОЛЛӘҮ** *ҡ.* Канифоль һөртөү.

**КАНИФО́ЛЬ** [*рус.* ⟨ *гр.*] *и.* Сайыр ҡыуғанда сыҡҡан ҡаты йылтыр һары матдә (келәйләү һәм изоляциялау өсөн, шулай уҡ ҡыллы уйын ҡоралдарының смычогын ышҡыу өсөн ҡулланыла). *Канифолле һабын.*

**КАНКА́Н** [*рус.* ⟨ *фр.*] *и.* Тән хәрәкәттәрендә әҙәпһеҙ ҡыланыштар сағылған эстрада бейеүе.

**КАНОНА́ДА** [*рус.* ⟨ *фр.*] *и.* Күп туптан өҙлөкһөҙ алып барылған атыш. *Артиллерия канонадаһы.* ■ *Канонадаларҙың ухылдауы дер тетрәтте бөтә донъяны.* Ғ. Әмири.

**КАНОНЕ́РКА** [*рус.* ⟨ *фр.*] *и.* Урта калибрҙағы бер нисә туплы бәләкәй хәрби карап (яр буйында ҡулланыла).

**КАНОНИ́Р** [*рус.* ⟨ *нем.*] *и.* 19 быуатта Россияла артиллерия һалдаты; тупсы.

**КАНО́Э** [*рус.* ⟨ *исп.*] *и.* Бер аяҡҡа тубыҡланып, һыңар ишкәк менән ишә торған үҙенә бер төрлө спорт кәмәһе.

**КАНТ** [*рус.* ⟨ *нем.*] *и.* Кейем ситенә йәки йөйгә ҡыҫтырып тегелгән тар таҫма; ҡайма. *Кант ҡуйыу. Кант ҡуйып тегеү. Кантлы салбар.*

**КАНТА́ТА** [*рус.* ⟨ *ит.*] *и.* **1.** Оркестр ҡатнашлығында күмәкләп йәки яңғыҙ йырлай торған тантаналы ҙур музыкаль әҫәр.

**2.** Тантаналы лирик шиғыр.

**КАНТЛАУ** *ҡ.* Кант ҡуйыу. *Кантлап тегеү.*

**КАНТО́Н** [*рус.* ⟨ *фр.*] *и.* **1.** Швейцария республикаһы составына ингән ерҙәрҙең айырым һәр береһе.

**2.** Франция һәм Бельгиялағы ваҡ административ берәмек.

**3.** *тар.* 18 быуаттың аҙағынан 19 быуаттың урталарына, 1919 йылдан райондар төҙөлгәнгә тиклем Башҡортостанда булған административ-территориаль берәмек. *Бөрйән-ҡыпсаҡ кантоны. Күҙәй кантоны.* ■ *Бөтә Башкортостан 28 кантонға бүленеп, һәр бер кантон башкорт феодалдары араһынан һайлап алынған кешеләр тарафынан идара ителгән.* З. Шәрҡи.

**4.** Шул берәмек башында торған рәсми кеше. *Яуыз кантондарҙы ҡуя икән Рәсәй генә тигән батшалыҡ* (Халыҡ йырынан).

**КАНТОНИ́СТ** [*рус.*] *и.* 19 быуаттың беренсе яртыһында Россияла тыуғас уҡ хәрби хеҙмәткә тәғәйенләп яҙып ҡуйылған, иң түбән хәрби мәктәптә тәрбиәләнгән һалдат улы.

**КАНЦЕЛЯ́РИЯ** [*рус.* ⟨ *лат.*] *и.* Учреждениеның яҙыу-һыҙыуға бәйле эштәрен алып барған бүлеге һәм шул бүлек урынлашҡан бүлмә. *Колхоз канцелярияһы. Канцелярия эше.*

**КА́НЦЛЕР** [*рус.* ⟨ *нем.*] *и.* **1.** Революцияға тиклемге Россияла: бик юғары вазифалы кешеләргә бирелә торған чин һәм шул чинды йөрөткән кеше.

**2.** Көнбайыш Европалағы ҡайһы бер илдәрҙә иң юғары вазифа һәм шул вазифалағы кеше.

**КАОЛИ́Н** [*рус.* ⟨ *кыт.*] *и.* Утҡа сыҙамлы аҡ балсыҡ (сынаяҡ яһау өсөн ҡулланыла).

**КАПЕ́ЛЛА** [*рус.* ⟨ *лат.*] *и.* **1.** Йырсылар һәм музыканттар ансамбле, хор. *Академик дәүләт капеллаһы.*

**2.** Католиктарҙа: айырым ғаиләнең бәләкәй ғибәҙәт йорто йәки сиркәү эсендәге айырым урын.

**КАПЕЛЬМЕ́ЙСТЕР** [*рус.* ⟨ *нем.*] *и.* Хәрби оркестр дирижеры.

**КАПИЛЛЯ́Р** [*рус.* ⟨ *лат.*] *и. махс.* **1.** Бик нәҙек көпшә. / Төрлө нәмә эсендәге ҡыл һымаҡ нәҙек кенә юл. *Тупрактағы капилляр.*

**2.** Бик ваҡ ҡан тамыры. *Капиллярҙар селтәре.*

**КАПИТА́Л** [*рус.* ⟨ *фр.*] *и.* **1.** Капитализм дәүерендә ялланған эшселәрҙе эксплуатациялау нигеҙендә аҡса хужаһына өҫтәмә файҙа килтерә торған ҡиммәт. *Даими капитал. Төп капитал. Үҙгәреүсән капитал. Финанс капиталы.* ■ *Тауар етештереү үҫешенең билдәле бер баҫҡысында аҡса капиталға әүерелә.* / *эк.* Ялланған эшселәрҙең капиталистар тарафынан эксплуатациялау мөнәсәбәтен сағылдырған экономик категория. / Капиталистар. *Капитал донъяһы.* ■ *Тармар килһен беҙҙең ҡыҫымдан аҡтыҡ көсөн йыйған капитал.* Х. Ҡунаҡбай. *Беҙҙең көрәш мал өсөн түгел, беҙҙең көрәш — синфи көрәш: беҙ бөтә кешелекте капитал ҡоллоғонан ҡотҡарыу өсөн көрәшәбеҙ.* Д. Юлтый.

**2.** Ҙур аҡса, күп аҡса. *Ҡулдағы капитал. Файҙаһыҙ ятҡан капитал. Дәүләт капитал һалыуы.* ■ *[Төҙөлөшкә] тотоласаҡ капитал һалыуҙарҙың эффектлылығы, объекттарҙың техник*

*кимәле .. документацияның сифатына бәйләнгән.* «Совет Башҡортостаны», 1985, 13 ноябрь.

**КАПИТАЛИ́ЗМ** [*рус.*] *и.* Етештереү сараларының шәхси ҡулда булыуына, ялланған эшселәрҙең капитал тарафынан эксплуатациялаңыуына нигеҙләнгән ижтимағи-экономик формация (феодализмды алмаштырып, социализмдан алда килә). *Монополистик капитализм.*

**КАПИТАЛИ́СТ** [*рус.*] *и.* Капиталистик йәмғиәттә өҫтөнлөк иткән синыф вәкиле, ялланма хеҙмәтте эксплуатациялаған капитал хужаһы.

**КАПИТАЛИСТИК** *с.* **1.** Капитализм принциптарына нигеҙләнгән. *Капиталистик королош. Капиталистик йәмғиәт. Капиталистик етештереү саралары.*

**2.** Капитализмға хас, капитализмға бәйле. *Капиталистик әхлаҡ нормалары.*

**КАПИТАЛЬ** [*рус.* капитальный] *с.* Төплө, нигеҙле, ныҡлы. *Капиталь йорт.*

◆ **Капиталь ремонт** бөтә яҡлап эшләнгән тулы ремонт (йорт, машина, станок һ. б.). **Капиталь стена** короламаның түбәһенә терәк булған төп стена. **Капиталь төҙөлөш** халыҡ хужалығы фондын киңәйтеүгә хеҙмәт иткән промышленность һәм торлаҡ төҙөлөшө.

**КАПИТА́Н** [*рус.* ⟨ *фр.*] *и.* **1.** Өлкән лейтенанттан юғарғы офицер дәрәжәһе һәм шул дәрәжәләге кеше.

**2.** Карап башлығы. *Теплоход капитаны. Капитан каютаһы. Капитан ярҙамсыһы.*

**3.** Спорт командаһының башлығы. *Хоккей командаһының капитаны.*

◆ **3-сө дәрәжәле капитан** флоттағы капитан-лейтенанттан һуң килгән офицер дәрәжәһе һәм шул дәрәжәләге кеше. **2-се дәрәжәле капитан** флоттағы 3-сө дәрәжәле капитандан һуң килгән офицер дәрәжәһе һәм шул дәрәжәләге кеше. **1-се дәрәжәләге капитан** флоттағы 2-се дәрәжәле капитандан һуң килгән офицер дәрәжәһе һәм шул дәрәжәләге кеше.

**КАПИТА́Н-ЛЕЙТЕНА́НТ** [*рус.*] *и.* Флоттағы өлкән лейтенанттан юғарғы офицер дәрәжәһе һәм шул дәрәжәләге кеше.

**КАПИТЕ́ЛЬ** [*рус.* ⟨ *лат.*] *и. архит.* Йорт колоннаһының йәки пилястрҙың туранан-тура түшәм менән тоташҡан өҫкө өлөшө.

**КАПИТУЛЯ́ЦИЯ** [*рус.* ⟨ *лат.*] *и.* Һуғыштың туҡтатылыуы һәм еңеүсе ҡуйған шарттарға риза булып еңелгән яҡтың баш һалыуы. *Капитуляция яһау.*

**КАПО́Т** [*рус.* ⟨ *фр.*] *и. тех.* Двигатель, механизмдарҙы һыуыҡтан һаҡлау өсөн яба торған көп. *Автомобиль капоты. Самолёт капоты.*

**КАПРА́Л** [*рус.* ⟨ *фр.*] *и.* 17 быуаттан 19 быуат башына тиклемге рус ғәскәрендә һәм ҡайһы бер сит ил ғәскәрҙәрендә иң кесе командир дәрәжәһе һәм шул дәрәжәләге кеше.

**КАПРИ́З** [*рус.* ⟨ *фр.*] *и. һөйл.* Холоҡһоҙлоҡ, еңмешлек.

**КАПРИ́ЧЧИО** [*рус.* ⟨ *ит.*] *и.* Киҫкен боролоштар, көслө биҙәктәр менән яҙылған музыкаль әҫәр. *Чайковскийҙың итальян каприччиоһы.*

**КАПРО́Н** [*рус.*] *и.* **1.** Синтетик ептең бер төрө. *Нәҙек капрон. // Капрон ау. Капрон бау. Капрон еп.*

**2.** Шул ептән эшләнгән туҡыма. *Аҡ капрон. // Капрон күлдәк.*

**3.** *һөйл.* Шул ептән бәйләнгән ойоҡ. *Капрон кейеү.*

**КА́ПСУЛА** [*рус.* ⟨ *лат.*] *и.* **1.** Ҡуша йотор өсөн эсенә дарыу һалынған көп. *Капсулалы касторка.*

**2.** *анат. ҡар.* **көп** [1] 2.

**3.** Герметик ябылған һауыт рәүешендәге нәмә. *Катапультланған капсула.*

**КА́ПСЮЛЬ** [*рус.* ⟨ *фр.*] *и.* Патрон, туптың һ. б. зарядын тоҡандырыу өсөн ҡулланылған, шартлағыс матдәле металл ҡапҡас. *Патрон капсюле. Снаряд капсюле.*

**КАПТЕНА́РМУС** [*рус.* ⟨ *фр.*] *и.* Армияла аҙыҡ-түлек, кейем-һалым, ҡорал менән тәьмин итеү һәм уларҙы һаҡлау эшен башҡарыусы кеше (Совет Армияһында 1917 йылдан 1950 йылға тиклем, батша армияһында 1716 йылдан 1917 йылға тиклем) *[Бәкер:] Каптенармус аҙыҡ алырға кеше эҙләп йөрөй ине, мин үҙем теләп барам тинем.* А. Таһиров.

**КАПЮШО́Н** [*рус.* ⟨ *фр.*] *и.* Яғаға ҡуша беркетелгән баш кейеме; башлыҡ. *Капюшонлы куртка. Плащ капюшоны. Капюшонды күтәреү.*

**КАРАБИ́Н** [*рус.* ⟨ *фр.*] *и.* Ҡыҫҡа көбәкле винтовка.

**КАРАБИНЕ́Р** [*рус.* ⟨ *фр.*] *и.* **1.** 19 быуатҡа тиклем Көнбайыш Европа илдәрендә һәм Россияла айырым һайланма ғәскәри берәмеккә ингән карабинлы һалдат.

**2.** Италиялағы жандарм.

**КАРАИ́М** *и.* Төрки телдәренең береһендә һөйләшкән халыҡ һәм шул халыҡтың бер кешеһе (Литвала һәм Ҡырымда йәшәй). *Караим халҡы. Караим ҡатыны. Караим теле.*

**КАРАКА́ТИЦА** [*рус.*] Һыуға көрән буяу сығарып йәшенә торған ҡыҫҡа һәрмәүесле диңгеҙ әкәм-төкәме.

**КАРАКҮЛ** *и. ҡар.* **каракүл.**

**КАРАМЕ́ЛЬ** [*рус.* ⟨ *фр.*] *и.* Эсе баллы ҡаты кәнфит. *Сейә карамеле.*

**КАРАНДАС** [*рус.* тарантас] *и. ҡар.* **ҡырандас.**

**КАРАНТИ́Н** [*рус.* ⟨ *фр.*] *и.* **1.** Йоғошло ауырыу таралмаһын өсөн, сирлеләрҙе һәм улар менән аралашыусыларҙы ваҡытлыса изоляциялау сараһы. *Бешмә карантины. Карантин ваҡыты. Карантинда тотоу.* ▬ *Ауылда карантин иғлан ителде: бер кемде индермәҫкә, бер кемде сығармаҫҡа.* Ә. Мирзаһитов.

**2.** Йоғошло ауырыу булған ерҙән килгән кеше һәм нәмәләрҙе тикшереү урыны. *Карантинда тороу.*

**КАРАП** [*рус.* корабль] *и.* **1.** Ҙур диңгеҙ судноһы. *Елкәнле карап. Хәрби карап. Сауҙа карабы.* ▬ *Зәңгәр диңгеҙ бушлығында яңғыҙ карап йөҙә.* З. Биишева.

**2.** Көслө ҙур осҡос аппарат. *Һауа карабы. Космос карабы.*

**КАРА́Т** [*рус.* ⟨ *гәр.*] *и.* Аҫыл таштарҙы үлсәү берәмеге (0,2 грамм).

**КАРА́ТЕЛЬ** [1] [*рус.*] *и.* Буйһонмаған халыҡты ҡырыу, язалау эшендә ҡатнашҡан кеше.

**КАРА́ТЕЛЬ** [2] [*рус.* карательный] *с.* Буйһонмаған халыҡты ҡырыу, язалау эшен башҡарған.

♦ **Каратель отряд** буйһонмаған йәки оккупацияла ҡалған халыҡты язалау эшен башҡарған хәрби отряд, полиция. *Каратель отрядтар ауыл һайын йөрөп, восстаниела ҡатнашкан кешеләрҙе ҡырып сыҡҡан.* «Башҡорт легендалары», 1969.

**КАРАТЭ́** [*рус.* ⟨ *яп.*] Үҙ-үҙеңде ҡоралһыҙ һаҡлау көрәшенең японлар системаһы.

**КАРАУАТ** [*рус.* кровать] *и.* Бер йәки ике кеше ятырлыҡ йоҡо урыны. *Ағас карауат. Тимер карауат. Йыймалы карауат. Пружиналы карауат. Балалар карауаты. Карауат башы.* ■ *Бүлмәләрҙә карауат-фәлән юҡ. Кем ҡайҙан урын таба — шунда ята.* А. Таһиров.

**КАРБАМИ́Д** [*рус.* ⟨ *лат.*] *и. махс.* Кеше һәм башҡа тереклектәге аҡһым алмашыныуынан барлыҡҡа килгән азотлы кристаллик матдә (беренсе тапҡыр бәүелдә табыла). *Карбамид — ашлама ғына түгел. Уны аҡһымға ярлы булған мал аҙығына ла ҡушалар.* М. Хисмәтов.

**КАРБИ́Д** [*рус.* ⟨ *лат.*] *и. хим.* Углеродтың ҡайһы бер металл йәки металлоидтар менән булған берләшмәһе. *Кальций карбиды. Кремний карбиды.*

♦ **Карбид лампаһы** ацетилен менән яндырылған лампа.

**КАРБОЛ** [*рус.* карболовый ⟨ *лат.*]: **карбол кислотаһы** дезинфекция яһау өсөн ҡулланылған әсе шыйыҡлыҡ; фенол. **Карбол һабыны** карбол кислотаһы ҡушылған һабын.

**КАРБО́ЛКА** [*рус.*] *и. һөйл.* Карбол кислотаһы (*ҡар.* **карбол**).

**КАРБО́Н** [*рус.* ⟨ *лат.*] *и. геол.* Таш күмер ятҡылыҡтары барлыҡҡа килгән осор; таш күмер осоро. *Һуңғы йылдарҙа Өфөнөң тирә яғындағы девон һәм карбон ҡатламдарының нефтле булыуы асылды.* М. Хисмәтов.

**КАРБОНА́Т** [*рус.* ⟨ *лат.*] *и.* **1.** *хим.* Күмер кислотаһының төрлө тоҙо (сода, поташ һ. б.).

**2.** *хим., геол.* Төрлө металл менән күмер кислотаһы ҡушылып барлыҡҡа килгән минералдарҙың исеме.

**КАРБОНАТЛЫ** *с. махс.* Составында карбонат булған. *Карбонатлы тупраҡ.*

**КАРБОНЛАУ** *ҡ.* Иретмәне йәки шыйыҡлыҡты углекислый газ менән эшкәртеү.

**КАРБОРУ́НД** [*рус.* ⟨ *лат.*] *и. махс.* Кремний менән углеродты ҡушып иреткәндән барлыҡҡа килгән йәшкелт йәки ҡара төҫтәге бик ҡаты кристаллик матдә (утҡа сыҙамлы нәмәләр яһау, ҡаты ҡоросто шымартыу, ҡайрау өсөн ҡулланыла); кремний карбиды.

**КАРБУЗ** *и. ҡар.* **ҡарбуз.**

**КАРБЮРА́ТОР** [*рус.* ⟨ *фр.*] *и.* Эске яныулы двигателдәрҙә шыйыҡ яғыулыҡ менән һауанан яныусан ҡушылма барлыҡҡа килтергән прибор.

**КАРДИНА́Л** [*рус.* ⟨ *лат.*] *и.* Католиктар сиркәүендәге папанан ҡала иң юғары рухани дәрәжә һәм шул дәрәжәләге кеше.

**КАРДИНАЛЬ** [*рус.* кардинальный ⟨ *лат.*] *с. кит.* Иң мөһим, иң әһәмиәтле. *Кардиналь мәсьәлә. Кардиналь үҙгәреш.*

**КАРДИОГРА́ММА** [*рус.* ⟨ *гр.*] *и.* Кардиограф ярҙамында яҙып алынған, йөрәк тибешен күрһәткән һыҙма.

**КАРДИО́ГРАФ** [*рус.* ⟨ *гр.*] *и.* Йөрәк тибешен яҙыу приборы.

**КАРДИО́ЛОГ** [*рус.* ⟨ *гр.*] *и.* Йөрәк ауырыуҙарын белгән врач.

**КАРДИОЛО́ГИЯ** [*рус.* ⟨ *гр.*] *и.* Медицинаның йөрәк ауырыуҙарын тикшерә торған бүлеге.

**КАРЕ́Л** *и.* Карелияның төп халҡы һәм шул халыҡтың бер кешеһе (фин телдәренең береһендә һөйләшә). *Карел халҡы. Карел ҡатыны. Карел теле.*

♦ **Карел ҡайыны** ҡырҡҡан ере матур биҙәкле ҡайындың бер төрө.

**КАРЕ́ТА** [*рус.* ⟨ *пол.*] *и. ҡар.* **көймә.**

**КАРИАТИ́ДА** [*рус.* ⟨ *гр.*] *и. архит.* Ҡатын-ҡыҙ һыны рәүешендәге йорт колоннаһы.

**КА́РИЕС** [*рус.* ⟨ *лат.*] *и. мед.* Теш һөйәгендәге ҡаты туҡыманың сереүе.

**КАРИКАТУ́РА** [*рус.* ⟨ *ит.*] *и.* **1.** Көлөп, мыҫҡыл итеп төшөрөлгән һүрәт. *Стеналағы буржуйҙарҙы мыҫҡыл итеп эшләнгән төрлө карикатуралар, һүрәттәр йәбештерелгән.* Я. Хамматов.

**2.** *күсм.* Бик насар, көлкөлө килеп сыҡҡан оҡшашлыҡ.

**КАРИКАТУРИ́СТ** [*рус.*] *и.* Карикатура яһаусы рәссам.

**КАРКА́С** [*рус.* ⟨ *ит.*] *и.* Берәй нәмәнең йәки бинаның һөлдәһе. *Йорттоң каркасы. Карапттың каркасы.*

**КАРМАЗИ́Н** [*рус.* ⟨ *гәр.*] *и.* Бурлат ҡыҙыл төҫтәге буҫтау; // *Кармазин бишмәт.* ■ *Кармазинкай яға, ай күк сәкмән, килбәтһеҙ ҙә иргә килешмәй* (Халыҡ йырынан).

**КАРМАНИ́ЙЫЛ** *и. диал.* Кармазин.

**КАРНАВА́Л** [*рус.* ⟨ *ит.*] *и.* **1.** Италия халҡының яҙғы байрамы.

**2.** Күмәк халыҡтың уйын-көлкөлө, маскарадлы уйыны. *Яңы йыл карнавалы. Карнавал кейеме.*

**КАРОТИ́Н** [*рус.* ⟨ *лат.*] *и.* Кишерҙә, йомортҡа һарыһында, һөттә һәм ҡайһы бер үҫемлек күҙәнәктәрендәге ҡыҙғылт-һары пигмент.

**КАРП** [*рус.*] *и. ҡар.* **һаҙан.**

**КАРСТ** [*рус.*] *и. геол.* Тау токомдарының һыуға ирееү һәм мәмерйә, ҡыуышлыҡ, соҡор яһалыуы менән бәйле күренештәр. *Карст мәмерйәһе.*

**КАРТ** [*рус.* ⟨*ингл.*] *и. спорт.* Мотоцикл двигателе ҡуйылған, бәләкәй метражлы, кузовһыҙ ярыш автомобиле.

**КА́РТА** [*рус.*] *и.* **1.** Ер йөҙөн сағылдырған һыҙма. *Географик карта.* ■ *Комиссар картаһын асты. Беҙ шул картанан үҙебеҙҙең ҡайһы ерҙән барғаныбыҙҙы ҡараныҡ.* М. Абдуллин. / Ер йөҙөнөң үҙенсәлекле билгеләрен күрһәткән шундай уҡ һыҙма. *Политик карта. Топографик карта. Физик карта. Синоптик карта. Этнографик карта. Ҡоштарҙың миграция картаһы. Ҡаҙылма байлыҡтар картаһы. Үҫемлектәр картаһы.* / Күк йөҙөн сағылдырған һыҙма. *Астрономик карта. Йондоҙҙар картаһы.*

**2.** Төрлө мәғлүмәт яҙыу өсөн графаларға бүленгән ҡағыҙ. *Курорт картаһы. Технологик карта.*

**КАРТЕ́ЛЬ** [*рус.* ⟨*фр.*] *и. эк.* Капиталистик монополияның бер төрө (айырым бер промыш-

ленность тармағындағы капиталистарҙың монополия тотоу, максималь файҙа алыу өсөн сауҙа һәм хаҡ шарттары буйынса төҙөгән берекмәһе)

**КА́РТЕР** [*рус.* ⟨ *ингл.*] *и.* Двигателдең хәрәкәтлялар тултырылған снаряд. *Пушкалар үкереп*

**КАРТЕ́ЧЬ** [*рус.* ⟨*пол.*] *и.* **1.** Эсенә йомро пуляләр тултырылған снаряд. *Пушкалар үкереп дошманға картечь уттарын түкте.* С. Кулибай.

**2.** Һунар мылтығының ҙур йәҙрәһе. *Картечь менән һаҙау.*

**КАРТИ́НА** [*рус.*] *и.* **1.** *кар.* **һүрәт** 1.

**2.** *һөйл. карт.* **кино** 2.

♦ **Томанлы картина** проекцион фонарь ярҙамында экранға төшөрөлгән һүрәт.

**КА́РТИНГ** [*рус.* ⟨*ингл.*] *и. спорт.* Карт тибындағы автомобилдәр ярышы.

**КАРТОГРА́ММА** [*рус.* ⟨ *гр.*] *и. махс.* График юл менән статистик мәғлүмәттәр төшөрөлгән карта. *Халыҡтың тығыҙлығын күрһәткән картограмма.*

**КАРТО́ГРАФ** [*рус.*] *и.* Карта төҙөү белгесе.

**КАРТОГРАФИК** *с. махс.* Картографияға мөнәсәбәтле. *Картографик тамғалар.* / Географик карталар эшләгән. *Картографик фабрика.*

**КАРТОГРА́ФИЯ** [*рус.* ⟨*гр.*] *и.* Карталар төҙөү эше һәм шул туралағы фән.

**КАРТО́Н** [*рус.* ⟨*ит.*] *и. кар.* **катырға.**

**КАРТОТЕ́КА** [*рус.* ⟨*гр.*] *и.* **1.** Ниндәйҙер мәғлүмәттәр яҙылған карточкаларҙың билдәле бер тәртиптәге йыйылмаһы. *Китапхана картотекаһы. Һүҙлек картотекаһы. Картотека шкафы.*

**2.** *йыйн.* Шул карточкаларҙы һаҡлай торған тартмалар.

**КА́РТОЧКА** [*рус.*] *и.* **1.** Төрлө мәғлүмәт яҙыу өсөн ҡулланылған дүрткел ҡатырға йәки ҡалын ҡағыҙ. *Иҫәп карточкаһы. Карточкаға яҙыу.*

**2.** Аҙыҡ-түлек, әйберҙәргә норма ҡуйылғанда, уларҙы билдәле бер тәртиптә алыу өсөн талондарға бүленгән бланк. *Аҙыҡ карточкаһы. Икмәк карточкаһы.* **Карточка системаһы** аҙыҡ-түлекте, тауарҙы карточка менән биреү системаһы. *Карточка системаһы индереү.*

**3.** *һөйл.* Фотография рәсеме; фото. *Карточкаға төшөү.*

**КАРТУ́З** [*рус.* ⟨*гол.*] *и.* Ирҙәрҙең козыреклы, текә тирәсле баш кейеме. *Башка картуз кейҙерҙеләр, өҫкә шинель бирҙеләр* (Бәйеттән).

**КАРТУФ** [*рус.* картофель ⟨ *нем.*] *и.* **1.** Эт ҡарағаты һымаҡтар ғаиләһенә ҡараған, тамырында крахмалға бай бүлбеләре булған баҡса үҫемлеге; бәрәңге. *Картуф сәскәһе. Картуф күмеү. Картуф ҡаҙыу.* **Картуф алмаһы** картуф сәскәһенең бәләкәй генә алма рәүешендәге емеше.

**2.** Ошо йәшелсәнең ашауға яраҡлы бүлбеһе. *Ҡыҙыл картуф. Һары картуф. Эре картуф. Ярмалы картуф. Картуф бәлеше. Картуф бешереү. Картуф ҡурыу.* ■ *[Сәлмән] картуфты һабағынан тотоп тартҡайны, ҡаҙ йоморҡаһы ҙурлыҡ ике картуфы килеп сыҡты, ти* (Экиәттән). **Картуф оно** 1) кипкән картуфты тартып яһаған крахмал; 2) *һөйл.* картуф крахмалы.

**КАРТУФЛЫҠ** *и.* Картуф баҡсаһы. *Зиннәт .. картуфлыҡ аша Юшатыр буйына сапты.* З. Ураҡсин.

**КАРУАН** [*фарс.*] *и.* Сүл-даланан йөк артып, аллы-артлы теҙелеп барған хайуандар төркөмө. *Дөйә каруаны. Каруан башлығы. Каруан менән юлға сығыу.* ■ *Бер нисә көн үткәс, каруандың юлға алып сыҡҡан һыуы бөткән. Кеше генә түгел, дөйәләр ҙә һыуһыҙ интегә башлаған* (Әкиәттән). *Арҡа өҫтәренән каруан килә, Бохаранан түгел Хиванан* (Халыҡ йырынан)./ *күсм.* Аллы-артлы теҙелеп барған нәмәләр төркөмө. *Ҡоштар каруаны.*

♦ **Каруан сәйе** көнсығыштан килтергән сәй; һинд сәйе.

**КАРУАНСЫ** *и.* Каруан йөрөтөүсе.

● *Сүлдең данын каруансы сығара.* Әйтем.

**КАРУАН-ҺАРА́Й** [*фарс.*] *и.* Каруан һәм каруансылар туҡтай торған йорт.

**КАРУСЕ́ЛЬ** [*рус.* ⟨*ит.*] *и.* Ситенә төрлө нәмә рәүешендәге ултырғыстар уратып ҡуйылған әйләнмәле түңәрәк ҡоролма. *Әйләнә карусель, әйләнә, карусель ҡоролған хәйләгә.* М. Кәрим.

**КА́РЦЕР** [*рус.* ⟨*лат.*] *и.* Яза өсөн ваҡытлыса ултырта торған бер кешелек бүлмә.

**КАРЬЕ́Р** [*рус.* ⟨ *фр.*] *и.* Өҫтән соҡоп, төрлө ҡаҙылдыҡ, балсыҡ, таш алған урын. *Ҡом карьеры. Күмер карьеры. Мәрмәр карьеры.* ■ *Бында әлек ниндәйҙер карьер булған, ахыры, тәрән-тәрән соҡорҙар бар.* К. Мәргән.

**КАРЬЕ́РА** [*рус.* ⟨ *фр.*] *и.* **1.** Кешенең эш-хеҙмәттәге үҫеше, эш өлкәһендә дәрәжәгә ирешеү, авторитет һәм дан ҡаҙаныу күренеше.

**2.** Айырым бер өлкәләге эш, хеҙмәт. *Хәрби карьера.*

**КАРЬЕРИ́ЗМ** [*рус.*] *и.* Ижтимағи эш мәнфәғәтен ҡайғыртмай, шәхси уңышҡа ғына ынтылыу күренеше.

**КАРЬЕРИ́СТ** [*рус.*] *и.* Йәмғиәт мәнфәғәтен күҙәтмәй, үҙ карьераһы өсөн генә тырышҡан кеше.

**КАСА** [*фарс.*] *и.* Йәйпәк ауыҙлы, тар төплө тотҡаһыҙ сынаяҡ. *Каса менән сәй эсеү.* ■ *Киленсәк .. ап-аҡ касаны мөлдөрәмә тултырып айран алып инде.* Н. Мусин.

♦ **Каса япрағы** *бот.* сәскә тажының тышынан уратып торған япраҡтар.

**КАСАК** [*рус.* косяк] *и.* Судноны тарта, һалды ярға бәйләй торған йыуан арҡан. *[Һалсылар] алтмыш метр оҙонлоғондағы сүс касаҡты канат аҫтынан уратып алдылар ҙа, ҡороп аҡҡан ташҡын уртаһындағы ҡузланан аша тарттылар.* М. Тажи.

**КАСАР** [*рус.* косарь] *и.* Иҙән ҡырып йыуа торған ҙур бысаҡ; салғы бысаҡ.

**КАСАФАТ** [*ғәр.*] *и.* Ниҙеңдер тәьҫиренән килгән насар һөҙөмтә. *Пётр батшаның [шведтар менән] .. һуғыш касафаты алыҫ Башҡортостанға ла ҡағылмай ҡалманы. Яуға ҡулләп ир-ат, йылҡы талап итә башланылар.* Ғ. Хөсәйенов. *Ғәфирә апай баҫыуға еңел генә кейенеп киткәйне, кисен өшөп-туңып ҡайтты. Шуның касафатылыр инде: ҡолаҡтары сәнсеп, башы ауыртып, биле һыҙлап тора.* Ә. Гәрәев.

**КА́СКА** [*рус.* ⟨ *фр.*] *и.* Күберәк тимерҙән эшләнгән баш кейеме (хәрби кешеләр, пожарник һ. б. кейә). *Пожарник каскаһы. Һалдат каскаһы.*

**КАСКА́Д** [*рус.* 〈 *фр.*] *и.* **1.** Һикәлтә-һикәлтә булып төшкән шарлауыҡ.

**2.** Опереттала: **йыр менән башҡарыла** торған ҡыҙыу темптағы бейеү.

**КАСНУЙ** [*рус.* косная] *и. диал.* Борам кәмәһе.

**КА́ССА** [*рус.* 〈 *ит.*] *и.* **1.** Аҡса һәм ҡиммәтле нәмә ятҡан махсус тимер ҡумта. *Кассаға бикләү.*

**2.** Алынған аҡса иҫәбенә талон бирә торған аппарат һәм шул аппарат ҡуйылған урын, кабина.

**3.** Предприятие, учреждениеның аҡса алыу-биреү, билет һатыу кеүек эштәрҙе башҡарған бүлеге һәм шул бүлек урынлашҡан урын, бүлмә. *Театр кассаһы. Тимер юл кассаһы.* ■ *Өфө вокзалына төшкәйнем, шунда күреп калдым Сәйҙелде билет кассаһының алдында.* Ғ. Сәләм.

**4.** Төрлө кредит ойошмаларының исеме составында ҡулланыла. *Страховой касса. Һаҡлыҡ кассаһы.*

**5.** Ойошманың булған аҡсаһы. *Кассаны барлау.*

**6.** (*йәки* **хәреф кассаһы**) *типогр.* типографик хәрефтәр һалынған бүлкәле-бүлкәле ҡумта.

◆ **Үҙ-ара ярҙам кассаһы** взнос иҫәбенә ваҡытлы ярҙам алыу өсөн профсоюз ағзалары тарафынан төҙөлгән ирекле ойошма.

**КАССАЦИОН** [*рус.* кассационный] *с. юр.* Кассацияға (1 мәғ.) мөнәсәбәтле. **Кассацион суд** түбәнге баҫҡыстағы судтың ҡарарын яңынан ҡарай торған юғары суд.

**КАССА́ЦИЯ** [*рус.* 〈 *лат.*] *и.* **1.** *юр.* Түбәнге баҫҡыс суд ҡарарының юғарғы баҫҡыста яңынан ҡаралыуы. *Кассация һорау. Кассация тәртибендә ялыу биреү.*

**2.** (*йәки* **кассация ялыуы**) Түбәнге баҫҡыс суд ҡарарының яңынан ҡаралыуын һорап юғарғы баҫҡысҡа биргән ғариза. *Хөкөм ителгәндәр өсөн кассация биреү срогы, гәҙәттәгесә, етмеш ике сәғәт ине.* Ғ. Әмири.

**3.** Һайлау һөҙөмтәһен законһыҙ тип табып, кире ҡаҡҡан ҡарар.

**КАССЕ́ТА** [*рус.* 〈 *фр.*] *и.* **1.** Фотография йәки кино плёнкаһын яҡтынан һаҡлай торған ҡумта.

**2.** Магнитофон лентаһы һауыты.

**КАССИ́Р** [*рус.*] *и.* Кассала (2—4 мәғ.) эшләүсе, аҡса һәм баһалы ҡағыҙҙарҙы алыу-биреү, билет һатыу эшен башҡарыусы хеҙмәткәр. *Кассир булып эшләү. Кассир ҡатын-ҡыҙ.*

**КА́СТА** [*рус.* 〈 *порт.*] **1.** Һиндостанда һәм ҡайһы бер көнсығыш илдәрендә: сығышы, хоҡуҡ-йолалары менән айырымланған ижтимағи төркөм. *Түбән каста. Юғары каста.*

**2.** *кусм.* Башҡаларға аралашмай, үҙенә башҡа ҡағиҙәләр менән йәшәгән ижтимағи төркөм.

**КАСТАНЬЕ́ТА** [*рус.* 〈 *исп.*] Бейегәндә усҡа кейеп шаҡылдата торған музыка ҡоралы (Испания, көньяҡ Италия һәм Латин Америка илдәрендә таралған).

**КАСТЕЛЯ́НША** [*рус.*] *и.* Больница, ятаҡ кеүек дөйөм йорттарҙағы урын-ер ҡаралдыһына хужа ҡатын.

**КАСТЕ́Т** [*рус.* 〈 *фр.*] *и.* Ҡурғаштан ҡойоп, усҡа кейә торған йоҙроҡ ҡоралы.

**КАСТО́РКА** [*рус.*]: **касторка майы** кенә уты орлоғонан алынған май (медицинала ҡулланыла).

**КАСТРЮ́ЛЯ** [*рус.*] *и. ҡар.* **кәстрүл.**

**КАТАКО́МБА** [*рус.* 〈 *ит.*] *и.* Боронғо Рим империяһындағы эҙәрләнгән христиандарҙың ер аҫтындағы йәшенә, ғибәҙәт ҡыла торған урындары. / Ер аҫтындағы оҙон тар коридорҙар рәүешендәге буталсыҡ юлдар. *Одесса катакомбалары.*

**КАТАЛА́ЖКА** [*рус.*] *и. һөйл.* Төрмә. *Каталажкала ултырыу. Каталажкаға ябыу.*

**КАТА́ЛИЗ** [*рус.* 〈 *гр.*] *и.* Катализатор тәьҫирендә химик реакцияның көсәйеүе йәки уның тиҙлегенең үҙгәреше.

**КАТАЛИЗА́ТОР** [*рус.*] *и. хим.* Химик реакцияны арттыра, кәметә йәки уның тиҙлеген үҙгәртә торған матдә. *Биологик катализатор.*

**КАТАЛИТИК** *с. хим.* Катализға мөнәсәбәтле. *Каталитик реакция.*

**КАТАЛО́Г** [*рус.* 〈 *гр.*] *и.* Бер төр нәмәләрҙең билдәле тәртиптә төҙөлгән исемлеге. *Китап каталогы. Йондоҙ каталогы. Каталог төҙөү.*

**КАТАМАРА́Н** [*рус.* 〈 *там.*] *и.* Ике корпус өҫтөнә палуба түшәп яһалған судно.

**КАТАПУЛЬТ** [*рус.* катапульта 〈 *лат.*] *и.* **1.** *тар.* Ауыр таш, бүрәнә кеүек нәмәне ҡәлғә эсенә ырғыта торған боронғо һуғыш ҡоралы; мәнжәник.

**2.** *тех.* Карап палубаһы йәки осоу майҙанынан самолетты осорта торған механизм.

**3.** Лётчик, космонавты осҡос эсенән автоматик рәүештә тышҡа ырғыта, атып сығара торған ҡорамал.

**4.** *тех.* Космонавтарға, осоусыларға күнекмә үткәрә торған ер өҫтөндәге ҡоролма.

**КАТАПУЛЬТЛАНЫУ** *к. ҡайт. ҡар.* **катапультлау.**

**КАТАПУЛЬТЛАУ** *к.* Катапульт (3 мәғ.) менән атып сығарыу.

**КАТА́Р** [*рус.* 〈 *гр.*] *и.* Тән ағзаһының эске яғындағы лайлалы тиресәнең шешеүе. *Ашҡаҙан катары. Тын юлы катары. Үпкә катары.*

**КАТАРА́КТА** [*рус.* 〈 *гр.*] *и. мед.* Ҡара ҡылау (*ҡар.* **ҡылау** 2).

**КАТАРАЛЬ** [*рус.* катаральный] *с.* Катарға мөнәсәбәтле. *Катараль йүтәл.*

**КАТАСТРО́ФА** [*рус.* 〈 *гр.*] *и. ҡар.* **һәләкәт.** *Тимер юл катастрофаһы. Катастрофаға осрау.*

**КАТАСТРОФИК** *с. ҡар.* **һәләкәтле.** *Катастрофик хәл.*

**КАТАФА́ЛК** [*рус.* 〈 *ит.*] *и.* Мәйетте алып китә торған арба йәки автомобиль. *Ҡала нәпмандарынан бөрәү үлгәйне. Уны йылтыр катафалкка һалып, ҡаланың үҙәк урамдары аша алып киттеләр.* И. Насыри.

**КАТЕГО́РИЯ** [*рус.* 〈 *гр.*] *и.* **1.** *филос.* Материаль донъялағы күренештәрҙең иң дөйөм үҙенсәлек һәм бәйләнештәрен сағылдырған төшөнсә. *Ваҡыт категорияһы. Сифат һәм һан категорияһы. Экономик категория.*

**2.** Фәнни терминологияла: нәмәләрҙең төрөн йәки уртаҡ үҙенсәлеген билдергән дөйөм төшөн-

сә. *Грамматик категория. Исем категорияһы.*

**3.** Бер төрлө нәмә һәм күренештәрҙең төркөмө. *Категорияға бүлеү. Айырым категория эшселәргә эш хаҡын күтәреү.* ■ *1869 йылда башҡорт урмандары .. ике категорияға бүленгәндәр: душевой наделдар һәм иркен урман участкалары.* «Совет Башҡортостанының ун йылы», 1929.

**КА́ТЕР** [*рус.* 〈 *ингл.*] *и.* **1.** Ваҡ эшкә йөрөгән бәләкәй генә карап.

**2.** Бәләкәй күләмдәге махсус хәрби карап.

**КАТЕРПИ́ЛЛЕР** [*рус.* 〈 *ингл.*] *и. иҫк.* АҠШ-тан алынған тәүге ҡарышлауыҡлы трактор.— *Ысынлап та трактор тауышы. Ана, һырындыларҙы ярып катерпиллер килеп сыҡты.* И. Насыри.

**КАТЕТ** [*рус.* 〈 *гр.*] *и. мат.* Тура мөйөшлө өсмөйөштә тура **мөйөш** яһаусы һыҙыҡтарҙың береһе.

**КАТЕ́ТЕР** [*рус.* 〈 *гр.*] *и.* Нәҙек кенә көпшә рәүешендәге медицина ҡоралы (эске ағзаға, мәҫ. һейҙек ҡыуығына, индереү өсөн ҡулланыла).

**КАТО́Д** [*рус.* 〈 *гр.*] *и.* Кире зарядлы электрод; *киреһе* анод.

◆ **Катод нурҙары** һирәк газ аша трубканан ток үткәндә, катодтың өҫкө йөҙөнән сығыусы нурҙар — электрондар.

**КАТО́К** [*рус.*] *и.* **1.** Конькиҙа йөрөү өсөн махсус эшләнгән боҙ; һырғалаҡ.

**2.** Ерҙе, юлды тигеҙләй торған ауыр цилиндр тәгәрмәсле машина.

**3.** Ерҙе тигеҙләү өсөн ҡулланылған ауыл хужалығы ҡоралы. *Дискылы каток. Тешле каток. Шыма каток.*

**КАТОКЛАУ** *к.* Каток (2, 3 *мәғ.*) менән тапатыу. *Юлды катоклау. Ерҙе катоклау.*

**КАТО́ЛИК** [*рус.* 〈 *гр.*] *и.* Католицизм йүнәлешен тоткан кеше.

**КАТОЛИЦИ́ЗМ** [*рус.*] *и.* Христиан диненең Рим папаһын баш тип иҫәпләгән төп йүнәлештәрҙең береһе.

**КА́ТОРГА** [*рус.* 〈 *гр.*] *и.* Батша Россияһында: йәшәү шарттары насар урынға һөргөнгә ебәреп, һаҡ аҫтында ауыр эш эшләтеү язаһы һәм шул язаға хөкөм ителгән кешеләр торған урын. *Себер каторгаһы. Каторга эше. Каторгаға ебәреү. Каторгаға хөкөм итеү.* ■ *1775 йылдың октябрендә Салауат атаһы Юлай менән бергә Рогервикка, гүмерлек каторгаға ебәрелә.* «Башҡорт поэзияһы», 1953.

**КАТОРЖАН** [*рус.* каторжанин] *и.* Каторгаға ебәрелгән йәки каторгала булған кеше. *Каторжандар колоннаһы. Политик каторжан.* ■ *Был ерҙәрҙә горур түҙемлекте декабристар һаҡлап йөрөгән. Каторжандар бығау тағып үткән.* М. Хәй.

**КА́ТОРЖНИК** [*рус.*] *и. кар.* **каторжан.**

**КАУСТИК: каустик сода** һыуҙа яҡшы ирей торған төҫһөҙ кристаллик матдә; ҙәһәр натр.

**КАУЧУ́К** [*рус.* 〈 *ингл.*] *и.* Резина яһау өсөн файҙаланылған ҡатмарлы матдә (үҫемлек һутынан йәки химик синтез менән алына). *Тәбиғи каучук. Синтетик каучук. Каучук заводы.// Каучук табанлы туфли.*

**КАУЧУКЛЫ** *с.* Каучук эшләргә яраҡлы һуты булған. *Каучуклы үҫемлектәр.*

**КАФЕ́** [*рус.* 〈 *фр.*] *и.* Сәй, ҡәһүә, ҡоро-һары һ. б. ашамлыҡтары булған бәләкәй ресторан.

**КА́ФЕДРА** [*рус.* 〈 *гр.*] *и.* **1.** Телмәр тотоу өсөн тәғәйенләнгән ҡалҡыу урын. *Кафедраға сығыу. Кафедранан һөйләү.*

**2.** Юғары уҡыу йортондағы айырым бер фән йүнәлеше һәм шул фән тирәһендә тупланған уҡытыусылар төркөмө. *Башҡорт теле кафедраһы. Физика кафедраһы. Кафедра етәксеһе. Кафедра ултырышы.*

**3.** Христиан сиркәүендә епископ ултыра торған ҡалҡыу урын.

**КА́ФЕЛЬ** [*рус.* 〈 *нем.*] *и.* Эзбизле балсыҡтан яндырып, өҫтән йылтыр менән ҡаплап яһалған дүрткел йоҡа плитка (мейес, стенаны көпләү өсөн ҡулланыла). *Кафелле стена.* ■ *[Харис:] Кухняға кафель йәбештереп сыҡтым. Күҙгөң дә кәрәкмәй, ялт итеп тора.* Ш. Янбаев.

**КАФЕТЕ́РИЙ** [*рус.* 〈 *исп.*] *и.* Кафеның бер төрө (ғәҙәттә клиент үҙен-үҙе хеҙмәтләндерә).

**КАФТА́Н** [*рус.* 〈 *фарс.*] *и.* Боронғо оҙон итәкле ирҙәр кейеме.

**КАФЫР** [*ғәр.*] *и.* **1.** Ғәҙәттә христиан динендәге кешеләргә мосолмандар тарафынан бирелгән исем. *Йыйын кафыр араһында яңғыҙы бойогоп килгән бабайға бер мосолманды осратыу бик ҙур ғәнимәт булды буғай.* Ғ. Ибраһимов./ Диндән яҙған кеше. *[Мулла:] Коммунист булған кеше бөтөнләй алланы танымай.. Шулай булғас, ул кафырҙың да кафыры була.* Һ. Дәүләтшина.

**2.** Әрләгәндә, шелтәләгәндә әйтелә.

◆ **Кафыр китеү** йынаҙаһыҙ, ясинһыҙ үлеү.

**КАХЕТИН** *и.* Грузин халҡының этнографик бер төркөмө һәм шул төркөм кешеһе.

**КАЧА́ЛКА** [*рус.*] *и. һөйл.* Скважинанан нефть һурҙыра торған ҡоролма.

**КАШАЛО́Т** [*рус.* 〈 *фр.*] *и.* Тешле киттар төркөмөнә ингән имеҙеүсе эре диңгеҙ хайуаны.

**КАШАР** [*рус.* кошара] *и. һөйл.* Һарыҡ кәртәһе.

**КАШАУАЙ** [*рус.* кошева]: **кашауай сана** артлы, киң еңел сана; ауыл санаһы. *Кейәү һөлөк кеүек яҡшы ерән айғыр егеп, кашауайға бер үҙе ултырып килде.* Ж. Кейекбаев.

**КАШАУАР** [*рус.* кашевар] *и. һөйл.* Аш бешереүсе. *Кашауар үртәнә-үртәнә баҫыу эшсәндәрен ашарға саҡыра.* Х. Ғиләжев.

**КАШКИ** [*фарс.*] *терк. иҫк. кит.* Әгәр, гәрсә. *Кашки булһа һәр әҙәм дә эстә кер-тап тотмаған.* Д. Юлтый.

**КАШНЕ́** [*рус.* 〈 *фр.*] *и.* Муйын яулығы, йоҡа шарф. *Ебәк кашне.*

**КАШТА́Н** [*рус.* 〈 *лат.*] *и.* **1.** Бук ағасы ғаиләһенә ингән аҡ сәскәле эре көньяҡ ағасы.

**2.** Шул ағастың ашай торған сәтләүеге.

**КАЮ́ТА** [*рус.* 〈 *гол.*] *и.* Карантағы команда йәки пассажирҙар бүлмәһе. *Беренсе класс каютаһы. Капитан каютаһы. Пассажирҙар каютаһы.*

**КАЮ́Т-КОМПА́НИЯ** [*рус.* 〈 *гол.* + фр.] *и.* Пароход, караптарҙа пассажирҙарға ашау-эсеү, ял итеү өсөн дөйөм бүлмә.

**КВАДРА́НТ** [*рус.* 〈 *лат.*] *и.* **1.** *мат.* Түңәрәктең дүрттән бер өлөшө.

2. Күк есемдәренең бейеклеген үлсәй торған боронғо астрономик прибор.

**КВАДРА́Т** [*рус.* 〈 *лат.*] *и.* **1.** Тигеҙ яҡлы дүртмөйөш; дүрткел.

**2.** *мат.* Һандың үҙенә үҙен арттырған ҡабатландығы. *Квадратҡа күтәреү. Дүрт икенең квадраты. Квадрат тамыры.*

**3.** *мат.* Икегә тиң дәрәжә күрһәткесе. *Өстө квадратҡа күтәреү.*

♦ **Квадрат метр** майҙан үлсәү берәмеге (иңе һәм буйы берәр метр булған майҙан). **Квадрат йәйә** [ ] формаһындағы йәйә. **Квадрат оя** рәт араларын эшкәртеү еңел булһын өсөн үҫемлектәрҙе, бер-береһенән ара ҡалдырып, шаҡмаҡ тәртибендә ултыртыу алымы. *Квадрат оя менән сәсеү. Квадрат оя ысулы. Квадрат оялап сәсеү.*

**КВАДРАТУ́РА** [*рус.* 〈 *лат.*] *и. мат.* Билдәле бер майҙандағы квадрат берәмектәр һаны. *Бүлмә квадратураһы.*

**КВАЛИФИКА́ЦИЯ** [*рус.* 〈 *лат.*] *и.* **1.** Берәй хеҙмәткә әҙерлек дәрәжәһе. *Юғары квалификация. Квалификация талап иткән хеҙмәт.* ■ *[Хеҙмәт коллективтары] үҙ ағзаларын коммунистик әхлаҡ рухында тәрбиәләй, уларҙың .. профессиональ квалификацияһын күтәреү тураһында хәстәрлек күрә.* Башҡорт АССР-ының Конституцияһы, 1984.

**2.** Махсус белем, һөнәр. *Квалификация алыу.*

**КВАЛИФИКАЦИЯЛЫ** *с.* Квалификацияға эйә, квалификацияһы булған. *Беҙҙең илебеҙ юғары квалификациялы кадрҙарға, кеүәтле индустрияға эйә.* «Совет Башҡортостаны», 1985, 11 ноябрь.

**КВАНТ** [*рус.* 〈 *лат.*] *и. физ.* Энергияның иң бәләкәй өлөшсәһе.

♦ **Квант механикаһы** теоретик физиканың атом ҙурлығындағы һәм бик бәләкәй массалы өлөшсәләрҙең хәрәкәт итеү закондарын өйрәнеүсе бүлеге.

**КВА́РТА** [*рус.* 〈 *лат.*] *и.* **1.** Ҡайһы бер илдәрҙәге шыйыҡ йәки бөртөклө нәмәләрҙе үлсәү берәмеге.

**2.** *муз.* Диатоник гаммалағы билдәле бер баҫҡыстан дүртенсе баҫҡыс. / Диатоник гаммалағы билдәле бер баҫҡыс менән шунан дүртенсе торған баҫҡысҡа тиклемге ара.

**КВАРТА́Л** [*рус.* 〈 *лат.*] *и.* **1.** Йылдың дүрттән бер өлөшө (өс ай). *Беренсе квартал. Квартал планы.*

**2.** Ҡаланың дүрт яҡтан киҫешкән урамдар менән сикләнгән өлөшө.

**КВАРТАЛЛАУ** *к.* **1.** Кварталға (1 мәғ.) бүлеү, кварталға һалыу. *Планды кварталлап төҙөү.*

**2.** Квартал-квартал итеү. *Йорттар тарау һалына. Кварталлап төҙөгәндә ... осһоҙораҡҡа төшөр ине.* «Совет Башҡортостаны», 1966, 26 июль.

**КВАРТЕ́Т** [*рус.* 〈 *ит.*] *и.* **1.** Дүрт инструмент йәки дүрт тауыш өсөн яҙылған музыка әҫәре.

**2.** *муз.* Дүрт музыканттан йәки йырсынан торған ансамбль. *Ҡыллы инструменттар квартеты.*

**КВАРТИ́РА** [*рус.* 〈 *нем.*] *и.* **1.** Йорттоң бер йәки бер нисә бүлмәһе, кухняһы һ. б. булған бер өлөшө. *Ике бүлмәле квартира. Һикһән квартиралы йорт.* ■ *Беҙҙең йорт һигеҙ квартиралы ғына. Ике генә подъездан тора.* Р. Низамов. **Коммуналь квартира** *ҡар.* **коммуналь.** / Торған өй. *Хужаһыҙ ҡалған квартира сикһеҙ моңһоу күренде.* З. Биишева.

**2.** Ваҡытлыса йәшәр өсөн билдәле бер шарттарға күнеп алынған йәки бирелгән бүлмә. *Үҙебеҙгә күрә квартира ла табылды. Ҡала ситендә .. Икебеҙгә бөтә ашау-эсеүе, мунсаһы, кер йыуыуы менән егерме дүрт һум.* С. Агиш.

**3.** Ҡунырға төшкән урын. *Квартираға төшөү.*

**КВАРТИРА́НТ** [*рус.*] *и.* Ваҡытлыса квартирала (2 мәғ.) тороусы кеше. *Квартирант индереү. Квартирант тотоу.* ■ *Хәжәр апай үҙ өйөндә квартиранттар хужа булғанын яратмай.* Ш. Янбаев.

**КВАРЦ** [*рус.* 〈 *нем.*] *и.* Күберәк кристалл рәүешендә осрай торған төҫһөҙ быяла һымаҡ минерал. *Үрге Мотал ауылынан аҫтараҡ таптаҙа кварц ҡомо сығып ята.* Д. Бураҡаев.

♦ **Кварц лампаһы** *ҡар.* **лампа.**

**КВАРЦИ́Т** [*рус.* 〈 *нем.*] *и.* Төрлө минерал ҡатнаш кварцтан торған тау тоҡомо.

**КВАРЦЛЫ** *с.* Составында кварц булған. *Кварцлы ҡомташ. Кварцлы руда.*

**КВИ́НТА** [*рус.* 〈 *лат.*] *и. муз.* **1.** Диатоник гаммалағы билдәле бер баҫҡыстан бишенсе баҫҡыс. / Диатоник гаммалағы билдәле бер баҫҡыс менән шунан бишенсе торған баҫҡысҡа тиклемге ара.

**2.** Ҡайһы бер музыка ҡоралдарындағы иң нәҙек тауышлы ҡыл.

**КВИНТЕ́Т** [*рус.* 〈 *ит.*] *и.* **1.** Биш инструмент йәки биш тауыш өсөн яҙылған музыка әҫәре.

**2.** *муз.* Биш музыканттан йәки йырсынан торған ансамбль. *Инструменталь квинтет.*

**КВИТА́НЦИЯ** [*рус.* 〈 *ит.*] *и.* Ниҙелер алғанлыҡҡа бирелә торған рәсми ҡағыҙ. *Аҡса квитанцияһы. Багаж квитанцияһы. Квитанция яҙҙырып алыу.*

**КВО́РУМ** [*рус.* 〈 *лат.*] *и.* Берәй ойошманың йыйылышын тулы хоҡуҡлы итеп һанау өсөн кәрәк булған ағзалар һаны. *Тулы кворум. Кворум етмәү.*

**КЕБИ** *бәйл. иҫк. кит.* Кеүек.

**КЕБЛӘ** *и.* Үҫемлек һуты менән туҡлана торған ваҡ бөжәк; ағас бете, үлән бете. *Баҡсаларҙы .. йыш ҡына ҡыяр кебләһе интектерә.* «Совет Башҡортостаны», 1986, 12 июнь.

**КЕ́ГЛИ** [*рус.* 〈 *нем.*] *и.* **1.** Теҙеп ултыртылған ҡыҫҡа таяҡтарҙы шар менән һуғып уйнай торған уйын. *Кегли уйнау.*

**2.** Шул уйын өсөн шымартып яһалған ҡыҫҡа таяҡтар.

**КЕГЛЬ** [*рус.* 〈 *нем.*] *и. типогр.* Типографик хәрефтәрҙең үлсәме.

**КЕДР** [*рус.* 〈 *гр.*] *и. ҡар.* **эрбет.**

**КЕҘГЕТ** *и. диал.* Тәгәрләк.

**КЕҘЕ** *с.* Әйткәнгә ыжламаҫ, ҡарышмал. *Кеҙе кеше. Кеҙе булыу.* / *Кеҙегә әйләнеү.*

**КЕҘЕЛЕ** *с. ҡар.* **кеҙе.**

**КЕҘЕЛӘНЕҮ** *к.* Үҙһүҙләнеп ҡарышыу, киреләнеү. *Бала кеҙеләнеп ашамай ултыра.*

**КЕҘӘ**[1] *и.* Уҫал бейәне һауған саҡта һыңар артҡы аяғын муйынына тарттырып бәйләгән бау. *Кеҙә һалыу.*

**КЕҘӘ**[2] *и. диал. ҡар.* **келә 1.** *Ике-өс ҡыҙ ишекте астырмаҫҡа була кеҙәгә килеп йәбеште.* Ж. Кейекбаев.

**КЕҘӘЛӘҮ**[1] *ҡ.* Кеҙә һалып бәйләү. *Бейәне кеҙәләү.*

**КЕҘӘЛӘҮ**[2] *ҡ. диал.* Келә һалыу. *Ишекте кеҙәләү.*

**КЕҘӘҮ** *ҡ. ҡар.* **кеҙәләү**[1].

**КЕЙГЕҘЕҮ** *ҡ. ҡар.* **кейҙереү.**

**КЕЙҘЕРЕҮ** *ҡ.* **1.** Өҫкө кейем кейергә ярҙам итеү, кемдеңдер тәненә кейем һалыу. *Йылы күлдәк кейҙереү.* / Берәй нәмәне өҫтән көпләү, тышлау. *Мендәргә тыш кейҙереү. Сумаҙанға көп кейҙереү.* ■ *Ҡолондо өшөтмәҫ өсөн бабай менән әбей көпө тегә һалып кейҙергән* (Әкиәттән). / *күсм.* Кейем бүләк итеү. *Өйрәнсек ҡайтып төшә. Һөнәрсегә ебәк сапан, аҡ сәллә, ситек-кәүәш кейҙерә.* З. Биишева.

**2.** Үткәреп, эләктереп өҫтән ҡуйыу. *Күҙлек кейҙереү. Быҙауға моронса кейҙереү. Йүгән кейҙереү. Күсәргә тәгәрмәс кейҙереү.* ■ *Ен ҡыҙы Әлеүкәйҙең бармағына балдаҡ кейҙереп киткән, ти* (Әкиәттән).

● *Бер атҡа ике ҡамыт кейҙермәйҙәр.* Мәҡәл.

**КЕЙҘЕРЕШЕҮ** *ҡ. урт. ҡар.* **кейҙереү.**

**КЕЙЕҘ** *и.* Һарыҡ йөнөнән йәйеп баҫылған ҡаралды әйбере. *Аласа кейеҙ. Тышлы кейеҙ. Кейеҙ баҫыу. Кейеҙ менән көпләгән ишек.* ■ *Һарыға буялған иҙәнгә аҡ кейеҙ йәйелгән.* Б. Хәсән. **Төнлөк кейеҙе** тирмә төнлөгөн яба торған кейеҙ. **Түр кейеҙе** ҡалын итеп баҫылған тар ғына кейеҙ (урындыҡ түренә һуҙып түшәлә). / Шул рәүештә баҫылған йөн нәмә. *Ҡамыт кейеҙе.* // *Кейеҙ олтораҡ. Кейеҙ ҡалпаҡ.*

◆ **Кейеҙгә баҫтырыу** төшкән килендең аяҡ аҫтына аҡ кейеҙ һалыу. **Кейеҙ ҡата** (*йәки* **калуш**) *шул уҡ* **калуш быйма** (*ҡар.* **быйма**). **Кейеҙ ҡолаҡ** *ҡар.* **ҡолаҡ.**

● *Дуҫың бысағы менән мөгөҙ киҫ, дошманың бысағы менән кейеҙ киҫ.* Мәҡәл.

**КЕЙЕҘЛӘНДЕРЕҮ** *ҡ.* Кейеҙгә әйләндереү, кейеҙ һымаҡ итеү.

**КЕЙЕҘЛӘНЕҮ** *ҡ.* Кейеҙ һымаҡҡа әйләнеү, кейеҙ һымаҡ булыу. *Йөн кейеҙләнгән. Сәс кейеҙләнгән.*

**КЕЙЕҘЛӘҮ** *ҡ.* Кейеҙ ҡуйыу, кейеҙ менән көпләү. *Ишекте кейеҙләү.* ■ *Ҡамыттарынды ла ебәр, яңынан мөйәтләп, кейеҙләп бирермен.* Ф. Исәнғолов.

**КЕЙЕК** I *с.* Ҡулға эйәләшмәгән; ҡырағай. *Кейек бал ҡорттары. Кейек коштар. Кейек булыу.* ■ *[Ҡаскындар] көндөҙҙәрен һунарға йөрөп, кейек йәнлек аулаған.* Н. Иҙелбай. *Тыуған илен һағынып, ҡаңғылдашып, кейек ҡаҙҙар килә күлдәргә.* Ҡ. Даян. / Ҡулға ылыҡмаҫ, уҫал. *Кейеккә әйләнеү. Кейек булып китеү.*

**II** *и.* **1.** Ҡырағай йәнлек. *Йыртҡыс кейектәр. Кейек аулау.* ■ *Йондоҙ ҡашҡа, урмандан ҡайтҡан кейек һымаҡ, һаман эйәләшмәй.* Р. Солтангәрәев.

**2.** *диал.* Ҡоралай, илек.

◆ **Аҡ кейек** тиреһе затлы йәнлек (аҫ, кеш, шәшке, тейен һ. б.). *Мендем гено бейек тауҙарға, аҡ кейеккәйҙәрҙе ауларға* (Халыҡ йырынан).

**КЕЙЕКЛӘНЕҮ** *ҡ.* Ҡырағайға әйләнеү; кейекһеү. *Улар [йылҡылар] күмәгәйгән, кеше күрмәй кейекләнеп киткән, ти* (Әкиәттән).

**КЕЙЕКСЕ** *и.* Һунар менән шөғөлләнеүсе; һунарсы.

**КЕЙЕКҺЕҮ** *ҡ.* Яртылаш ҡырағайға әйләнеү; ҡырағай һымаҡ булыу. *Кейекһегән бесәй. Өйөр айғырҙары аҫауланып кейекһеп киткән.*

**КЕЙЕЛГӘН** *с.* Кейеп таушалдырған, яңы түгел. *Кейелгән итек. Кейелгән күлдәк.*

**КЕЙЕЛЕҮ** *ҡ. төш. ҡар.* **кейеү.** *Балдаҡ шунда уҡ ҡыҙҙың бармағына үҙенән-үҙе кейелгән дә ҡуйған* (Әкиәттән).

**КЕЙЕМ** *и.* **1.** Өҫ-башҡа кейеп йөрөй торған нәмә. *Йәйге кейем. Ҡышҡы кейем. Ҡалын кейем. Тышҡы кейем. Яңы кейем. Иске кейем. Йылы кейем. Затлы кейем. Хәрби кейем. Аяҡ кейеме. Баш кейеме. Өҫ кейеме. Кейем шкафы.* ■ *Көтөүсе кейеме кейеп, Алпамыша килеп инде, ти.* «Алпамыша».

**2.** Һан менән: өҫ-башҡа кейеп йөрөй торған ишле бер нәмә. *Бер кейем итек. Бер кейем күлдәк-ыштан. Ике кейем бейәләй.* ■ *[Әбубәкер] төйөнөн систе .. һәм бер кейем өр-яңы сабата менән киндер салбар сығарып һалды.* Р. Ғабдрахманов.

**КЕЙЕМ-ҠАРА** *и. йыйн.* Өҫ-башҡа кейә торған төрлө кейем; кейем-һалым. *Юлға кейем-ҡара әҙерләү.* ■ *Көйә төшмәһен өсөн, кейем-ҡараны ваҡыты-ваҡыты менән еләтеп, ҡаҡҡылап торорға кәрәк.*

**КЕЙЕМЛЕ** *с.* Кейемгә бай, кейеме күп. *Кейемле кеше. Ул бик кейемле.*

**КЕЙЕМЛӘҮ** *ҡ. диал.* Кәфенләү.

**КЕЙЕМ-ҺАЛЫМ** *и. йыйн.* Һәр төрлө өҫ кейеме; кейем-ҡара. *Хәҙер инде минең кейем-һалым да ауылдағыса түгел, киндер күлдәк урынына — ҡаласа тегелгән ситса күлдәк, бумажный булһа ла — салбар.* Т. Йәнәби.

**КЕЙЕМҺЕҘ** *с.* Кейемгә ярлы. *Эшсе затлы кейем текте, гел кейемһеҙ булды үҙе.* С. Әлибаев.

**КЕЙЕНДЕРЕҮ** *ҡ.* **1.** Кейем кейҙереү, кейенергә ярҙам итеү. *Баланы кейендереү. Йылы итеп кейендереү.*

**2.** Кейем менән тәьмин итеү, яҡшы кейем кейҙереү. *[Иванов:] Бөтә тапҡан-таянғанын Нинаның уҡыуына бөтөрә. Уны кейендерә, уға түләй.* Д. Юлтый.

**КЕЙЕНДЕРЕШЕҮ** *ҡ. урт. ярҙамл. ҡар.* **кейендереү.** *Көнһылыу уның [Мәрйәмдең] әй-вайына ҡуймай, балаларҙы үҙе кейендерешә башланы.* З. Биишева.

**КЕЙЕНЕП-ЯҺАНЫУ** *ҡ.* Ҡупшы итеп кейенеү; ыҫпайланыу. *Шулай бер саҡ Һоябикә кейенеп-яһанып, йөрөргә сығып киткән, ти* (Әкиәттән).

**КЕЙЕНЕҮ** *ҡ.* **1.** Үҙ өҫтөнә кейеү. *Боронғоса кейенеү. Йәштәрсә кейенеү. Йылы кейенеү. Ыҫпай кейенгән кеше.* ■ *Рәшиҙә кейенә башлағас, Сәгиҙә лә урынынан тороп китергә әҙерләнде.* М. Тажи.

**2.** Өç-башты бөтәйтеү, яҡшы кейем кейеү. *Кейенергә яратыу. Кейенеп йөрөү.*

**КЕЙЕНЕШЕҮ** *ҡ. урт. ҡар.* **кейенеү.** *Ҡыҙҙар шаулашып, уйнап-көлөп, һыу һибешеп арыйҙар ҙа кейенешеп күгәрсен булып осоп китәләр* (Әкиәттән).

**КЕЙЕРЕҮ** *ҡ. диал.* Киреү.

**КЕЙЕҮ** *ҡ.* **1.** Кейемде үҙ өҫтөңә һалыу, тәнде кейем менән ҡаплау. *Аяҡҡа кейеү. Башҡа кейеү. Ҡулға бейәләй кейеү. Өҫкә тун кейеү.* ■ *[Өмөтбай] өҫтөнә брезент тужурка, оҙон ҡуныслы итек кейгән.* Ғ. Дәүләтшин. *Ап-аҡ күлдәк кейгән йәш ҡайын.* Ғ. Амантай. / Өҫтә, тәндә йөрөтөү; ҡулланыу. *Күлдәкте оҙаҡ кейеү. Эшселәр кейә торған кейем.* ■ *Беҙҙең тирәләге башҡорттар сабата кейә.* Т. Йәнәби.

**2.** Үткәреп, эләктереп, үҙеңә ҡуйыу. *Йөҙөк кейеү. Күҙлек кейеү. Саңғы кейеү. Уймаҡ кейеү.* ■ *Салауат атҡа менә алмай, өҙәңгекәйҙәрен кейә алмай* (Халыҡ йырынан).

**КЕЙӘ** [1] *и.* Умартаның ҡорт инә торған еге. *Кейәне асыу. Кейә уйыу.* ■ *Бал ҡорттары [солоктоң] кейәһенән бер инеп, бер сығып геүләп осоп тора, ти.* Ж. Кейекбаев.

**КЕЙӘ** [2] *и.* Ниҙеңдер ҡәҙерен белмәй шашыуҙың, насарлыҡ эшләүҙең һуңынан килгән яҙаһы; ҡоһор. *Кейәһе етеү. Кейәһе төшөү. Кейәһен күреү.*

**КЕЙӘ** [3] *и. һөйл.* Күҙ-колаҡ, хәстәр. *Күктәге йондоҙҙар, урамда кейәһеҙ ҡалған балалар кеүек, секрәйешеп яналар.* Д. Юлтый.

**КЕЙӘЛЕК** *и. ҡар.* **кейә** [2].

**КЕЙӘНКЕ** *и.* Еңел холоҡло, тотанаҡһыҙ ҡатын-ҡыҙ; уйнашсы. *[Маруся:] Кит күҙ алдымдан, Тимаҡ! Ерәнәм мин һинән, кит! [Тимаҡ:] Ах, һин, кейәнке.* С. Мифтахов.

**КЕЙӘҮ** *и.* **1.** Өйләнеп йөрөгән егет. *Кейәү булыу. Кейәүҙе ҡыҙ янына ябыу.* ■ *[Хәмдиә:] Алла бирһә, быйыл туйҙарын ашап-тырып, үҙҙәрен кейәүгә ҡушып, таҫтарын алабыҙ инде.* Һ. Дәүләтшина. *[Бәҙергол туйҙың] һәр йолаһын йолалап, еренә еткереп, ысын кейәүҙәрсә маһир үтәргә тырышты.* Ғ. Хөсәйенов. **Кейәү аҙығы** туйға һуйылған малдың кейәүгә биреп ҡайтара торған алғы һаны. **Кейәү аҡсаһы** (*йәки* **тәңкәһе**) кейәүҙең балдыҙ, ҡәйнештәренә тараткан аҡса һәм бүләктәре. **Кейәү аты** кейәүгә ҡайны бүләк иткән ат. **Кейәү ашы** (*йәки* **күстәнәсе**) кейәү егет алып килгән күстәнәс. *Кейәү ашына саҡырыу.* **Кейәү бала** кейәүләп йөрөгән егет (ҡыҙҙың ата-әсәһе, оло туғандарына). **Кейәү егет** кәләш эйттергән егет. **Кейәү егете** (*йәки* **көсөгө, нөгәре, үңере**) кейәүҙең туй ваҡытында янында йөрөгән дуҫ егете. **Кейәү күлдәге** кейәүгә ҡыҙҙың ата-әсәһе бүләк иткән кейем. **Кейәү күренеше** ҡыҙҙың яҡын туғандарына беренсе күрешкәндә кейәү биргән бүләк.

**2.** Ир (яңы өйләнешкән йылдарҙа — ҡатынына ҡарата). *Кейәүгә биреү. Кейәүгә ҡасып китеү.* ■ *Зая уҙа ла баһа Зөлхизәнең йәш ғүмере. Уға бит инде ун һигеҙ йәш. Кейәүгә сығыр мәле еткән.* З. Биишева. *[Мәскәй әбей:] Балам, кейәүеңде ярата һыңмы?* (Әкиәттән). **Көсөк кейәү** ҡайны-ҡәйнә йортонда торған кейәү; йортҡа ингән кейәү. **Өй кейәүе** *диал.* көсөк кейәү.

**3.** Ҡыҙ йәки һеңле тейеш ҡатын-ҡыҙҙың ире. *Кейәү итеү.* ■ *Ғамир Гәрәйҙең кейәү тейеш кешеһе була. Бер туған кейәү түгел, шулай ҙа яҡын. Үҙе аҫрап үҫтергән йәтим Шәрифәнеке.* Б. Бикбай.

♦ **Кейәү еҫе** *шул уҡ* **кейәү үләне** (*ҡар.* **үлән**). **Кейәү ҡамсыһы** *ҡар.* **ҡамсы. Кейәү өйө** ҡыҙҙы кейәүгә ҡушҡан аулаҡ өй. **Кейәү туҫтағы** туй ваҡытында ҡыҙҙың еңгәләре бал ҡойоп биргән туҫтаҡ (уны эскәс аҡса, бүләк һалалар).

● *Кейәү кергәнсә ҡыҙың һаҡла, кейәү кергәс, өйөң һаҡла.* Мәҡәл. *Килен ҡәйнә буҫағаһынан, кейәү ҡайны буҫағаһынан яралыр.* Мәҡәл.

**КЕЙӘҮЛӘҮ** *ҡ.* Туйҙан һуң оҙатып алғанға тиклем кәләш янына килеп йөрөү (элекке йола). *Кейәүләп йөрөү.* ■ *Бәҙергол бер аҙна кейәүләп ятты. Башта ирмәк тойолһа ла, тик көн дә мунса инеү аҙаҡ йәштәрҙе ялҡыта башланы.* Ғ. Хөсәйенов.

● *Көйһөҙ кейәү кейәүләп ятҡансы, көйлө кейәү кәләшен алып ҡайтҡан.* Мәҡәл.

**КЕКС** [*рус.* ⟨ *ингл.*] *и.* Йөҙөм ҡушып майға баҫылған татлы икмәк.

**КЕЛТ** *оҡш.* Сиртмәле тимер нәмә ҡапыл асылған йәки ябылғанда сыҡҡан йомшаҡ тауышты белдергән һүҙ. *Келт иткән тауыш.* ■ *Келт итеп сәғәт өҫтөндәге ҡапҡас асылды ла «кәкүк» сыҡты.* Б. Бикбай.

♦ **Келт итеп иҫкә төшөү** ҡапыл иҫкә төшөү.

**КЕЛТЕЛДӘҮ** *ҡ.* Келт-кепт итеү, келт-келт тигән тауыш сығарыу. *Сәғәт келтелдәп йөрөй.*

**КЕЛТЕР-КЕЛТЕР** *оҡш.* Тимер нәмәләр еңелсә сайҡалғанда, бер-береһенә бәрелгәндә сыҡҡан йомшаҡ ритмик тауышты белдергән һүҙ. *Тәгәрмәстәр бер көйгә генә тәгәрләй: келтер-келтер, келтер-келтер.* Т. Килмөхәмәтов.

**КЕЛТЕРЛӘТЕҮ** *ҡ.* Келтер-келтер иттереү, келтер-келтер тигән тауыш сығарыу.

**КЕЛТЕРЛӘҮ** *ҡ.* Келтер-келтер итеү, келтер-келтер килеү. *Урғыс бер көйгә генә келтерләй.* Ф. Иҫәнғолов. *Тәгәрмәстәр келтерләүе тау-таштарҙы йоҡонан уята.* В. Нафиҡов.

**КЕЛТЕРӘТЕҮ** *ҡ. ҡар.* **келтерләтеү.**

**КЕЛТЕРӘҮ** *ҡ.* **1.** *ҡар.* **келтерләү.** *Вагон тәгәрмәстәренең келтерәп барыуҙары уларҙың уйын тыныс бер юлға һалып ебәрҙе.* Б. Ишемғол. / *күсм.* Бер ыңғай менән яй ғына дауам итеү (эш, тормошҡа ҡарата); тәгәрләү. *Эш, майлаған арба кеүек, келтерәп кенә бара.* Я. Вәлиев.

**2.** Саҡ-саҡ эләгеп, һелкенеү (ҡалай, тимер кеүек нәмәләргә ҡарата). *Келтерәп кенә тороу.*

**КЕЛТЕРӘШЕҮ** *ҡ. урт. ҡар.* **келтерәү.**

**КЕЛТИФУН** *и. һөйл.* Төрлө прибор, ҡулайламаларҙа эләктереп торған, ҡаптырып ҡуйған бәләкәй генә нәмә. *Йоҙаҡтын келтифуны тотмай. Сәғәттең келтифуны ыскынған.*

**КЕЛТ-КЕЛТ** *оҡш.* Ҡабат-ҡабат келт иткән тауышты белдергән һүҙ. *Келт-келт йөрөй сәғәт теле, ваҡыт үтә.* М. Хәй.

**КЕЛТЛӘҮ** *ҡ. ҡар.* **келтелдәү.**

**КЕЛТӘ** *р. диал.* Ҡырҡа. *Келтә боролоу.*

**КЕЛЬТ** [*рус.*] *и.* Беҙҙең эраға тиклем меңенсе йылдарҙа Көнбайыш Европала йәшәгән ҡәбиләләр төркөмө.

**КЕЛӘ** *и.* **1.** Ырғаҡ рәүешендәге бик, элгес. *Ишек келәһе. Келәне элеү.* ■ *Сәхәрйәр келәне ыскындыра ла ишекте ҡыҫып ҡына тышҡа күҙ һала.* Ә. Гәрәев. / Шылдырып ҡына биклəй торған ҡыҫҡа таяҡ рәүешендәге бик. *Келә һалыу. Ҡапҡа келәһе. Тәҙрә келәһе.* ■ *Келәһе шалтыр-шолтор килеп, тақта солан ишеге асылды.* В. Нафиҡов.

**2.** Ҡаптырып, йоҙаҡ элә торған атлама. *[Татлыбайҙың] хәтере насар — келәһендә йоҙаҡ тотманы.* З. Биишева.

**КЕЛӘГӘ** *и. диал.* Тоба, ятыу.

**КЕЛӘЙ** [*рус.* клей] *и. ҡар.* **елем.**

**КЕЛӘЙМӘ** [*рус.* клеймо] *и.* **1.** Нәмәнең сифатын, эшләнгән ваҡытын, урынын һәм башҡаһын күрһәткән билдә; тамға. *Завод келәймәһе. Иткә келәймә һуҡтырыу.* ■ *Мирхәйҙәр байҙың герҙәре келәймәһеҙ, ти.* Ғ. Хәйри. / Малдың тәненә яндырып баҫылған билдә; тамға. *Келәймә баҫыу.*

**2.** Боронғо заманда боласыларға яндырып баҫылған билдә; тамға. *Маңлайға келәймә һуғыу.*

**3.** Шул билдәләрҙе һуға торған ҡорал; тамға.

**КЕЛӘЙМӘК** [*рус.* колымага] *и.* Көлтә, һалам, бесән кеүек нәмә ташый торған бейек үрәсәле оҙон арба.

**КЕЛӘЙМӘЛӘТЕҮ** *к. йөкм. ҡар.* **келәймәләү.**

**КЕЛӘЙМӘЛӘҮ** *к.* Келәймә һуғыу, келәймә баҫыу.

**КЕЛӘМ** [*фарс.*] *и.* **1.** Өбөрөләп, биҙәкләп, йөндән һуғылған ҡаралды әйбере; көйөҙ. *Келәм туҡыусылар.* ■ *Бына аҫыл келәм залдың иҙәнендә, Ленин баҫҡан эҙ бар уның биҙәгендә.* Н. Иҙелбай.

**2.** *диал.* Балаҫ.

**КЕЛӘН** *с. диал.* Шыма, тигеҙ. *Келән таш.*

♦ **Келән көпшә** *диал.* шыма көпшә (*ҡар.* **көпшә** 1).

**КЕЛӘНКӘЙ** *и.* Шыма көпшә (*ҡар.* **көпшә** 1).

**КЕЛӘПӘ** *с. диал.* Күрә ҡарау, күрәш. *Келәпә кеше.*

**КЕЛӘТ** [*рус.* клеть] *и.* **1.** Иген һала, аҙыҡ-түлек йәки башҡа нәмә тота торған йорт ҡаралтыһы. *Таш келәт. Колхоз келәте. Келәт бурау.* ■ *Иген йыйып алынған, келәткә һалынған.* Ғ. Дәүләтшин.

**2.** *диал.* Кәзәнкә.

♦ **Аҡ келәт** бәләкәй генә тәҙрәле таҙа келәт (йәй көнө унда йоҡлап та була). **Ут келәте** *диал.* **аш аласығы** (*ҡар.* **аласыҡ**).

● *Ир — келәт, ҡатын — йоҙаҡ.* Әйтем.

**КЕЛӘТСЕ** *и.* Келәттәге нәмә өсөн яуаплы кеше; келәт мөдире.

**КЕЛӘҮЕК** *и.* **1.** Үтә күренеп торған йоҡа ғына нәмә; яры. *Яра, келәүек ҡаплап, уңала башлаған.*

**2.** *с. мәғ.* Үтә күренеп торған, бик йоҡа (боҙға ҡарата).

**КЕЛӘҮЕКЛӘНЕҮ** *к.* **1.** Яры менән ҡапланыу (йәрәхәткә ҡарата).

**2.** Йоҡа ғына боҙ менән ҡапланыу. *Һыу келәүекләнеп туңа башлаған.*

**КЕЛӘШ-КЕЛӘШ** *саҡр.* Ҡолон саҡырғанда әйтелә.

**КЕЛӘШШӘ** [*рус.* клещи] *и. ҡар.* **ҡыпсыуыр.**

**КЕМ** [1] *а.* **1.** *һор.* Кешенең исемен йәки нindәй кеше булыуын һорағанда ҡулланыла. *Кем килә? Кем кәрәк? Ат кемдеке?* ■ *Эстән берәү сығып, нәҙек тауыш менән: «Кем бар?» — тип ҡысҡырҙы.* Т. Йәнәби.— *Балаң булһа, кем тип ҡуштырыр инең?* Б. Ишемғол. / Риторик һорауҙа ҡулланылып, яуабында «һәр кеше» мәғәнәһе фараз ителә. *Батырмын, тип, кем әйтмәй — яу килгәндә йүне юҡ.* Салауат Юлаев. *Ил тигәндең кеме юҡ, кеме юҡ та ние юҡ* (Ҡобайырҙан). / Риторик һорауҙа ҡулланылып, яуабында «бер кеше лә» мәғәнәһе фараз ителә. *Кем уйлаған уны.* ■ *Еңеллеген, нәфислеген ҡара һин уның! Кем уны ҡомдан, балсыҡтан эшләнгән көршәк тип әйтә алыр.* З. Биишева.

**2.** *билдһ.* Атап әйтелмәгән бер шәхесте белдерә. *Кем дә булһа.* ■ *Байҙар бара ҡырандаста, ярлылар артта — йәйәү. Кемгә рәхәт, кемгә михнәт, Урал буйында йәйләү.* С. Кулибай. / Үҙенә хас сифаты булған бер шәхесте белдерә. *Кем икәне билдәһеҙ.* ■ *Һеҙгә кем тип әйтергә лә белмәйем.* М. Тажи. *Эштә, көрәштә күренә, кемдәрҙең кем икәне.* Н. Нәжми.— *Бына мин кем,— тигән теге ҡыҙ.— Мин әбей ҙә була алам, теләгән бер нәмә һүрәтенә инә алам* (Әкиәттән).

**3.** Баш һөйләмдең эйәһен асыҡлаусы эйәрсен һөйләмдә эйә вазифаһын үтәй. *Кем хеҙмәтен намыҫ менән үтәй, кайҙа эшләһә лә хур түгел.* Ғ. Сәләм.

**4.** *һөйл.* Яңғыҙлыҡ исемдәр алдынан килеп, өҫтәмә өндәш һүҙ вазифаһын үтәй. *[Ҡарауылсы:] Ашлыҡ кәбәкһеҙ булмай инде ул, кем Ғилемхан ҡусты.* «Ағиҙел», 1964, № 7.

**5.** *аныҡлаусы һүҙ менән:* **бер кем** бер кеше, берәү. *Бер кем дә юҡ. Бер кем дә күрмәне. Бер кемгә лә кәрәкмәй.* **Теләһә кем** теләһә нindәй кеше. *Теләһә кемгә сер һөйләмә. Тәләһә кем менән дуҫлашыу.* **Һис кем** бер кеше, берәү. *Һис кем алдында ҡаушаманы.* ■ *[Томинко] һөйләй торған һүҙен һис кемдән ҡурҡмай һөйләй.* Д. Юлтый. **Һәр кем** һәр кеше. *Һәр кемгә лә аңлайышлы һүҙ. Һәр кем үҙенсә хәл итә.* **Әллә кем** билдәһеҙ кеше. *Урәдниктар ҙа, тағы ла әллә кемдәр ҙә бар. Кеше күп, илле-алтмышлап булыр.* Һ. Дәүләтшина.

♦ **Кем белә [бит]** *инш.* булыры-булмаҫы икеле булғанда әйтелә; белмәҫһең, ҡайҙан беләһең. *Кем белә, бәлки ысынлап та Ныяҙголдоң берәй ярҙамы тейеп ҡуйыр.* Һ. Дәүләтшина. **Кем дә кем** „кем" һүҙен көсәйтеү өсөн ҡулланыла. *Кем дә кем миңә буйһона — шул иркен тын алып, рәхәт йәшәй; кем дә кем буйһонмай — шул тыны ҡыҫылып, интегеп үлә* (Әкиәттән). **Кем етте шул** теләһә нindәй кеше. *Хәҙер фермаларҙа кем етте шул ғына эшләп йөрөр заман түгел инде.* «Совет Башҡортостаны», 1966, 4 февраль. **Кемдеке — шуныҡы** *инш.* исем һатмаҫҡа өндәгәндә әйтелә. *[Председатель:] Ҡустым, аттың иң яҡшыһын һайлап ек. Кемдеке — шуныҡы, колхоздың йөҙөнә ҡыҙллыҡ килтерерлек булмаһын.* «Совет Башҡортостаны», 1964, 23 август. **Әллә кем булыу йәки үҙеңде әллә кемгә ҡуйыу** маһайыу, эреләнеү. *Бына бер заман әллә кем булып ирәйеп йөрөгән дейеүҙе Урал елтерәтеп*

*күтәреп тә алды, бырактырып та ебәрҙе, ти.* «Урал батыр».

● *Кем эшләмәй, шул ашамай.* Мәҡәл. *Кем арбаһына ултырһаң, шуның йырын йырларһың.* Мәҡәл. *Ҡымыҙҙы кем яратмай, ҡыҙҙы кем һоратмай.* Мәҡәл. *Әйтмәгәнде кем белә, асмағанды кем күрә.* Мәҡәл.

**КЕМ** [2] *иш.* **1.** Хәл, ваҡиғаның көсөргәнешле булыуына баҫым яһау, тыңлаусының иғтибарын тартыу өсөн ҡулланыла. *Аҡбуҙ асыуланып, Уралды шул тиклем бейеккә сөйөп ебәрҙе, ти, кем, теге атылып төшөп, биленә тиклем ергә батты, ти.* «Урал батыр». *Ямғыр шул тиклем шәп яуҙы, кем, һыуланмаған еребеҙ ҡалманы.* Ж. Кейекбаев.

**2.** Йырҙарҙа «һай», «вай» ымлыҡтары менән бергә көсәйтеү вазифаһын үтәй. *Ҡаһым түрә менән һор юрғаҡай, вай кем, тояҡтары ҡупкан, баҫа алмай* (Халыҡ йырынан). *Каруан да ғына һарай ай асылғас, һай кем, яуҙан ҡайтҡас, кантондарға булды ай фарман* (Халыҡ йырынан).

**КЕ́МБРИЙ** [*рус.*] *и.*, **кембрий осоро** *геол.* Палеозой дәүеренең тәүге осоро. *Нефть кембрий осоронан алып, хәҙерге дәүергә тиклем туктауһыҙ барлыкка килгән.* Д. Бураҡаев.

**КЕМДЕР** *билдһ. а.* Кем икәне билдәһеҙ кеше; әллә кем. *Кемдер илай, кемдер ыңғыраша.* Ш. Бабич.

**КЕ́МПИНГ** [*рус.* ⟨*ингл.*] *и.* Автотуристар өсөн лагерь.

**КЕМСӘ** *а. иҫк.* Ниндәй ҙә булһа бер кеше, кем дә булһа берәү. *Ете ырыу халкының башлыктарынан ете кемсә.. Ҡазанға барып, [батшаға] гарзы итағәт иткән.* М. Һаҙыев.

**КЕМСӘНӘ** *а. иҫк. кар.* **кемсә.** *Ҡобан йортона барҙым, бер ҡарт кемсәнәлә ҡунаҡ булдым.* «Башҡорт шәжәрәләре», 1960. *Тир ауырыулы кемсәнәләр һаташалыр.* С. Яҡшығолов.

**КЕМТЕРЛӘҮ** *к.* Әкрен генә хәрәкәтләнеү (хәлһеҙ кешегә ҡарата). *Кемтерләп йөрөү.* ■ *Бер ҡарт менән бер әбей булған. Улар кемтерләп ярлы ғына көн иткәндәр, ти* (Әкиәттән).

**КЕМУҘАРҘАН** *р.* Кем уҙарҙан (*кар.* **уҙыу**).

**КЕМҺӘНӘ** *а. иҫк. кар.* **кемсә.** *[Килмәк — Арыҫланға:] Һин бит арҙаҡлы батыр! Илдең өлкәндәре, яҡшы кемһәнәләре һиңә күҙ бағып тора.* Ғ. Ибраһимов.

**КЕМӘЙ** *и. диал. кар.* **әхирәт** [2].

● *Матур кыҙҙың кемәйе йәмһеҙ булыр.* Әйтем.

**КЕНА́Ф** [*рус.* ⟨*лат.*] *и. кар.* **кәнәп.**

**КЕНГУРУ́** [*рус.* ⟨*англ.*] *и. кар.* **көнгөрә.**

**КЕНДЕК** [1] *и.* **1.** *анат.* Ҡарындағы баланы, яралғыны инә ҡарынына тоташтырып, уны туҡландырыу хеҙмәтен үтәгән нәҙек кенә эсәк. *Кендек бауы. Кендек бәйләү. Кендек ҡыркыу.* **Кендек инәһе** (*йәки* **әбейе**) тыуған баланы ҡабул итеп, кендеген ҡырҡҡан ҡатын-ҡыҙ. *Тыуған ҡыҙ баланы ҡулына алып, Муйылбикә үҙе кендек инәһе булды.* Һ. Дәүләтшина. **Кендек таҫтары** кендек ҡырҡҡан ҡатынға бирелгән бүләк. *Кендек таҫтарына биш метр ҡулдәклек бирҙем.*

**2.** Ҡорһаҡ уртаһында соҡорайып торған урын. *Кендек соҡоро.* **Кендек сығыу** кендек боҙолоп ҙурайыу.

◆ **Донъя кендеге** *шул уҡ* **донъя тотҡаһы** (*кар.* **тотҡа**). **[Кемдәндер] айырылһа, кендеге ҡанай** кемгәлер бәрәү гел тағылып йөрөгәндә әйтелә. *Уның бит атаһынан айырылһа, кендеге ҡанай.* **Кендек йәбешеү** берәй кешегә йәки урынға эйәләшеп, айырыла алмаҫ булыу. *Исламдарға кендегем йәбешкәнме ни! Мин дә башыма бүрек кейгән ир ҙә баһа.* Ә. Зәйнуллин.

**КЕНДЕК** [2] *и.* **1.** Арбаны алтәкмәккә тоташтырған үҙәк. *Ағас кендек. Тимер кендек. Арба кендеге.* ■ *Ул [Әбделкәбир] ишек алдында, итегенең эсенә арба кендеге кейҙереп, уксәһенә сыҡкан ҡаҙауҙарҙы төйөп маташа.* Ф. Иҫәнғолов.

**2.** Һал ишкәген беркеткән үҙәк.

◆ **Кендек бырау** *диал.* йыуан ҙур бырау.

**КЕНДЕКӘЙ** *и. диал.* Кендек әбейе.

**КЕНТ** *и. иҫк. кит. кар.* **ҡала** [1].

**КЕНӘ** [1] *и.* Күңелдә йөрөтөлгән асыу; үс. *[Тимергәле ҡарт:] Ҡан ҡатышҡанға йыл тулды, үпкәләр, кенәләр бөттө инде.* Һ. Дәүләтшина. **Кенә ҡыуыу** (*йәки* **һаҡлау, тотоу**) күңелдә асыу йөрөтөп үс алырға тырышыу. *[Ҡотлобай:] Юҡ, юҡ, донъялыҡтағы донъяла ҡалһын. Ике йәшәргә килгәнбеҙме әллә ер йөҙөнә, кенә ҡыуып йөрөргә.* Н. Ҡотдосов.

**КЕНӘ** [2] *и.*, **кенә уты** Телгеләнеп торған япрай япраҡлы, суҡ сәскәле, сәнскәк орлоҡло, һөтлөгәндәр ғаиләһенә ҡараған ағас һымаҡ үҫемлек (орлоғонан кастор майы, һабағынан сүс алалар).

**КЕНӘ** [3] *к. кар.* **ғына.**

**КЕНӘГӘ** [*рус.* книга] *и.* Китап һымаҡ итеп төпләнгән махсус эш дәфтәре. *Бухгалтерия кенәгәһе. Инвентарь кенәгәһе. Иҫәп кенәгәһе. Йорт кенәгәһе.* ■ *Ялыу кенәгәһе тулған төртмә-төртмә һүҙ менән.* Ғ. Дәүләтов.

◆ **Йорт кенәгәһе** *кар.* **йорт** 1.

**КЕНӘЗ** [*рус.* князь] *и.* **1.** Феодаль Рәсиялағы ғәскәр һәм өлкә башлығы. *Мәскәү ҡалаһына нигеҙ һалған кеше Юрий Долгорукий тигән кенәз булған.*

**2.** Шул башлыҡтарҙың нәҫеленә бирелгән дәрәжә.

**КЕНӘЗЛЕК** *и.* Кенәз идара иткән өлкә. *Бөйөк Мәскәү кенәзлеге.*

**КЕНӘМ** *с. диал.* Кенәсел.

**КЕНӘСЕЛ** *с.* Кенә һаҡлаусан, кенә ҡыуыусан. *Кенәсел кеше.*

**КЕНӘҮ** *к.* Оҙаҡ ас йөрөүҙән эс нык тартылыу. *Ас йөрөп, эсе кенәп киткән.*

**КЕНӘШЕҮ** *к.* Оҙаҡ ас йөрөүҙән эс тартылып, ашай алмаҫ хәлгә килеү. *Аска кенәшеү.*

**КЕПЕС** *с.* Ҡыҫылып бөткән, сырт-сырт йомолоп торған (күҙгә ҡарата).

**КЕПЕСЛӘНЕҮ** *к.* Кепескә әйләнеү, кепес булыу. *Йәш үҫмерҙәрҙән алып, теше төшөп, ауыҙы кәүжәйеп, күҙе кепесләнеп бөткән ҡарт-ҡорого тиклем .. урамға сыҡҡан.* Ш. Шәһәр.

**КЕПЕСЛӘТЕҮ** *к.* Күҙҙе сырт-сырт йомоу. *[Татлыбай] кепесләтеп йәшел күҙен:* «*Мин гәйепле, апай, кисер*",— *ти.* З. Биишева.

**КЕПЕСЛӘҮ** *к.* Сырт-сырт йомолоу (күҙгә ҡарата). *Кепеслəп торған күҙ.*

**КЕ́ПКА** [*рус.*] *и.* Ирҙәрҙең козыреклы йәйге баш кейеме. *Салих .. кепкаһының киң козырегы аҫтынан ғына бөтә булмәне һөҙөп ҡарап сыҡты.* Б. Ишемғол.

**КЕР** [1] *и.* **1.** Тәндәге, кейемдәге бысраҡ. *Ҡул кере. Тән кере. Кергә ҡатҡан кулдәк. Кер ҡундырмай кейеү. Керен алғанса йыуыу.* ■ *[Ҡыҙҙың] өҫтөндә .. керенә ҡырҡылып бөткән киндер кулдәк.* К. Ибәтуллин.

**2.** *күсм.* Эстәге, күңелдәге насарлыҡ. *Ай зирәк ҡыҙ, ай зирәк ҡыҙ, үткер теле, изгеләрҙән изгерәктер, юҡтыр кере.* Ш. Бабич. **Эс кере** күңелдәге насарлыҡ, яуыз уй. *Асыҡ уның дуҫлыҡ тойғоһо, юҡ унда һис бер эс кере.* М. Сөндөклө.

◆ **Кер күтәреү** керләнгәне һиҙелмәй торған булыу. *Кер күтәргән кулдәк. Аҡ нәмә кер күтәрмәй.* **Кер төшөрөү** хурлыҡ килтереү; тап төшөрөү. *Кер төшөрмәй беҙ һаҡларбыҙ Ленин бабай юлдарын* (Халыҡ йырынан). **Тырнаҡ аҫтынан кер эҙләү** юҡ ғәйепте табырға тырышыу.

**КЕР** [2] *и.* Йыуылған йәки йыуырға ҡуйылған кейем, ҡаралды әйбере. *Йыуылмаған кер. Таҙа кер. Кипкән кер. Кер ҡыҫтырғыс. Кер туҡмағы. Кер һабыны. Кер йыуыу. Кер сайҡау. Кер үтекләү.* ■ *Тау аҫтынан шишмә аға керҙе ағарта торған* (Халыҡ йырынан). **Кер машинаһы** кер йыуа торған машина. **Кер тәгәрләткес** уҡлауға ураған киндер нәмәне тәгәрләтеп йомшарта торған ҡырлы-ҡырлы ағас. **Кер әҫетеү** аҡ керҙе ағартыу өсөн эремсек һыуына, һоло апараһына һалыу.

**КЕРАМЗИ́Т** [*рус.* ⟨ *гр.*] *и.* Ҡыҙыл балсыҡ ҡатыш тау тоҡомдарынан үртәп, бөртөклө итеп эшләгән күҙәнәкле еңел таш рәүешендәге төҙөү материалы (өй башына һалыу, таҡта стена эсенә тултырыу, бетонға ҡушыу өсөн ҡулланыла). *Керамзит заводы. Керамзит эшләү.*

**КЕРАМИК** *с.* Балсыҡтан үртәп яһалған. *Керамик плита.*

**КЕРА́МИКА** [*рус.* ⟨ *гр.*] *и.* **1.** Балсыҡтан төрлө нәмә яһау эше. *Керамика сәнгәте. Керамика цехы. Керамика менән шөғөлләнеү.*

**2.** *йыйн.* Балсыҡтан яһалған төрлө нәмәләр. *Художестволы керамика.* / Шул нәмәләрҙе яһау өсөн ҡулланылған балсыҡ. *Керамиканан эшләнгән ваза.*

**КЕРАТИ́Н** [*рус.* ⟨ *гр.*] *и. биол.* Сәс, тырнаҡ, тән тирәсәләре составындағы аҡһым матдәһе.

**КЕРБӘЛӘК** *и. диал.* Кер туҡмағы. *[Мәрйәм] кербәләген таш өҫтөнә ҡуйып, ҡыҙарған йөҙөн һөртөштөрөп алды.* Р. Низамов.

**КЕРГӘЗИН** *и. ҡар.* **кармазин.** *Тышы ҡыҙыл кергәзиндән, эсе ҡара бәздән .. бишмәт тектерҙеләр.* М. Ғафури.

**КЕРҘӘШ** *и.* Ер иҫәбенә ингән сит ырыу, сит тоҡом.

**КЕРЕГЕҮ** (керек*г*) *к.* Кер ҡунып бысрау; керләнеү. *Керекҡән яулыҡ.* ■ *Аҡлы ситса кулдәгемдең яғалары керекҡән* (Халыҡ йырынан).

**КЕРЕКТЕРЕҮ** *к.* Кер ҡундырып, бысратыу; керләндереү. *Инәкәйемдең яулығын керектермәй йыуып торороҙ* (Сеңләүҙән).

**КЕРЕКТӘН** *и. ҡар.* **кәркәдән.**

**КЕРЕЛДӘК** *и.* Иң ваҡ аҡсарлаҡ.

**КЕРЕМ** *и.* Айырым бер хеҙмәттән, йыйымдан килгән һәм бухгалтер кенәгәһенә теркәлгән материаль байлыҡ йәки аҡса. *Керем кенәгәһе. Малсылыҡтан килгән керем.*

**КЕРЕМ-СЫҒЫМ** *йыйн.* Ингән һәм тотонолған аҡса йәки материаль байлыҡ.

**КЕРЕТЕҮ** *к. ҡар.* **индереү.**

**КЕРЕҮ** *к. ҡар.* **инеү.** *Килеп кереү. Өйгә кереү. Йомошҡа кереү. Һуғышҡа кереү. Фатирға кереү. Колхозға кереү. Иҫәпкә кереү. Күк төҫкә кереү. Рәткә кереү. Ҡул араһына кереү.* ■ *Һөйгән генә йәрең ҡуштан булһа, кереп бара йөрәк-бауырыңа* (Халыҡ йырынан).

● *Кереүеңдән алда сығыуыңды уйла.* Мәҡәл.

**КЕРЕШ** [1] *и.* **1.** Яндың сирткес бауы. *Ебәк кереш. Тарамыш кереш.* ■ *[Аҡъял] уғын алған да, янға ҡуйып, керешен тартҡан. Уҡ атылып, һыҙғырып киткән* (Әкиәттән). *Әҙернә лә йәйә, ай һөйәк баш, йәшел ебәк кәрәк керешкә* (Халыҡ йырынан). / Ҡайһы бер эш ҡоралдарының тарттырып ҡуйған бауы. *Ҡул бысҡыһының кереше. Бысҡыға кереш тартыу.*

**2.** *һөйл.* Кейем-һалымды тотоу өсөн кейелгән резина бәй. *Ойоҡ кереше. Ыштан кереше.*

**3.** Тел аҫтындағы тартылып торған яры. *Керешле тел. Телдең керешен киҫеү.*

**4.** Умрау һөйәгенең барлау тамыры аҫтындағы тарамышы.

**5.** *диал. ҡар.* **ҡарама** [2].

**6.** *диал. ҡар.* **ҡарағош** [2].

**КЕРЕШ** [2] *и.* Ян һымаҡ итеп эшләнгән йөн теткес ҡорал.

**КЕРЕШЕҮ** [1] *к. урт. ҡар.* **кереү.** *Бер береңә керешеп йөрөү.*

**КЕРЕШЕҮ** [2] *к.* Берәй эште эшләй башлау, эшләргә тотоноу. *Уҡырға керешеү. Һүҙгә керешеү. Хәйләгә керешеү. Эшкә керешеү.* ■ *Балаһы булмау арҡаһында бығаса ғаилә бәхете күрмәгән Ғәрифә бик ихласланып алып донъя көтөргә кереште.* Ф. Иҫәнғолов. *Таңдан тороп уҙ эшенә керешеп китте ҡояш.* Ә. Әхмәткужин.

**КЕРЕШКЕ** *и. диал. ҡар.* **кереш** [1] 1.

**КЕРЕШЛЕ** *с. диал.* Һыйышлы.

**КЕРЕШЛӘҮ** *к.* Кереш[1] (1 мәғ.) ҡуйыу. *Янды керешләү.* ■ *Егеттең яны мөгөҙҙән яһалып, бүре тарамышы менән керешләнгән* (Әкиәттән).

**КЕРЛЕ** *с.* Кер ҡунып ҡарайған, керләнгән; бысраҡ. *Керле кулдәк. Керле таҫтамал.* ■ *Аҡлы ситса кулдәгемде ҡулым керле тотмайым* (Халыҡ йырынан).

**КЕРЛӘНДЕРЕҮ** *к.* Кер тейҙереп ҡарайтыу, керле итеү; бысратыу, керектереү. *Кулдәкте керләндереү.*

**КЕРЛӘНЕҮ** *к.* Кер тейеп ҡарайыу, керлегә әйләнеү; бысрау, керегеү. *Керләнгән яулыҡ. Керләнеп ҡайышҡа әйләнгән бүрек.* ■ *Һалдаттар .. керләнгән салбарҙарын сисеп, яңы салбар кейеп маташа.* Д. Юлтый.

**КЕРЛӘҮ** *к.* **1.** Керле итеү, бысратыу.

**2.** *күсм.* Кешенең исеменә, намыҫына бысраҡ яғыу, хурлыҡ килтереү. *Важдынымды керләп*

*күп дошмандар, ҡул сабышып ситтән көлдөләр.* Х. Ғәбитов.

**КЕРН** [*рус.* ⟨*нем.*] *и. тау* Ер быраулағанда сыҡҡан тау тоҡомоноң өлгөһө.

**КЕРНИС** [*рус.* крыса] *и. диал. кар.* **ҡомаҡ** [1].

**КЕРНИСӘ** [*рус.* крыльцо] *и. диал. кар.* **күтәрмә** [2].

**КЕРНӘ** *и. һөйл.* Иҫте аларлыҡ ҡаты баш ауырыуы. *Кернә менән йонсоу.*

**КЕРНӘКӘ** *и.* Эсәктең эске яғындағы лайла.

**КЕРОГА́З** [*рус.*] *и.* Кәрәсин яныуҙан ҡыҙыулыҡ барлыҡҡа килгән милтәле аш бешергес. *Керогазда аш бешереү.*

**КЕРПЕ** *и. диал.* **1.** *кар.* **терпе** 1.

**2.** *кар.* **морондоҡ** [1] 3.

**КЕРПЕК** *и.* Күҙҙе кәртәләп торған йөн төктәре. *Оҙон керпек. Күҙ керпеге.* ■ *Түңәрәк күл ҡамышындай ҡуйы ҡара керпектәреңде күтәреп бер генә ҡарасы.* Т. Йәнәби. *Йөҙ илле лә керпек күҙен йомоп, йоҡлай минең һылыуым төш күреп* (Халыҡ йырынан). **Ҡуш керпек** эскә табан үҫеп, күҙҙе өйкәп торған керпек.

♦ **Керпек сәнсеү** теклэү. *Керпек сәнсеп ҡарау.* **Керпек ҡағыу** күҙ асып йомоу. *Керпек ҡағырға ла өлгөрмәнек, ҡырмыҫҡалар йыланды һырып алды.* «Совет Башҡортостаны», 1970, 7 октябрь. **Керпек тә ҡаҡмау** 1) күҙ ҙә йоммау. *Мин [Рәсимәнең] күҙенә һөҙөлөп, керпек тә ҡаҡмай ҡарайым.* Ф. Иҫәнғолов; 2) саҡ ҡына ла йоҡламау, серем дә итмәү. *Ниндәй яҡшы, ниндәй татлы булды бөгөн төн, керпек тә ҡаҡмай үткәрҙем ошо төндө мин.* Салауат Юлаев.

**КЕРПЕКСӘ** *и. биол.* Үҫемлек һәм тереклек күҙәнәктәрендәге ваҡ ҡына үҫенделәр.

**КЕРСЕК** *и. диал.* Тубырсыҡ.

**КЕРСЕКЛӘНЕҮ** *ҡ.* Бөҙрә-бөҙрә булып ойошоу (болотҡа ҡарата).

**КЕРСЕЛ** *с.* Тиҙ керләнеүсән.

● *Кеше малы тирсел, кеше кейеме керсел.* Мәҡәл.

**КЕРСӘЙЕҮ** *ҡ. диал.* Тызрайыу. *Керсәйеп тороу.*

**КЕРСӘН** *с. диал.* Керсел.

**КЕРТ** *оҡш.* Ҡатыраҡ нәмәне ҡырҡҡанда, ҡырҡа тешләгәндә сыҡҡан тауышты белдергән һүҙ. *Керт итеп ҡалыу. Керт иттереп ҡырҡыу.*

**КЕРТЕЛДӘТЕҮ** *ҡ.* Керт-керт иттереү. *Кәзә бәрәстәренең кертелдәтеп бесән ашағанын .. тыңлап, Сәғиҙә үйгә сумды.* М. Тажи.

**КЕРТЕЛДӘҮ** *ҡ.* Керт-керт итеү. *Туш ите май ғына, кертелдәп тора.*

**КЕРТ-КЕРТ** *оҡш.* Ҡабат-ҡабат керт иткән тауышты белдергән һүҙ. *Япмаларҙа көр бәрәстәр тын ғына керт-керт көйшәй.* С. Кулибай.

**КЕРТЛӘТЕҮ** *ҡ.* Керт-керт иттереү; кертелдәтеү. *[Малайҙар] өйөлөп ятҡан ҡарҙы кертләтеп, уя-уя баҫып, өйҙәренә ҡайтып китте.* З. Биишева.

**КЕРТЛӘҮ** *ҡ. кар.* **кертелдәү**. *Ҡарға суҡый кертләп торған ҡалъяны.* С. Иманғолов.

**КЕРТӘПӘ** *и. диал.* Иргәйел.

**КЕРҺЕҘ** *с.* **1.** Кере юҡ, бысранмаған, таҙа (кейем, тән һ. б.-ға ҡарата).

**2.** *күсм.* Таҙа намыҫлы; саф. *Керһеҙ дуҫлыҡ. Керһеҙ күңел.* ■ *Керһеҙ сабый, яңы ҡырҡы тулған, аҡ ебәккә урап тотоғоҙ.* Х. Ғәбитов.

**КЕРШӘН** *и.* **1.** Бит майы. *Кершән һөртөү.* ■ *Һәжәр сәстәрен төҙәтте, битенә кершән яҡты, ирендәренә ҡыҙыл йүгертте.* Ғ. Хәйри.

**2.** Биткә һөртә торған аҡ онтаҡ; пудра. *Ап-аҡ итеп кершән яҡһаң, битең ҡояш ашамаҫ* (Халыҡ йырынан).

**КЕРӘКӘ** *и.* Һаҙамыҡ урын, батҡыл ер. *Еҙ йыланы һыҙғыра керәкәлә, муклектә* (Халыҡ йырынан). / Үлән, мүк баҫҡан күл.

**КЕРӘН** [*рус.* хрен] *и.* **1.** Әүернә сәскәлеләр ғаиләһенә ҡараған, оҙонса яҫы япраҡлы, әүернә сәскәле, йыуан тамырлы баҡса үләне. *Керән сәскәһе. Керән япрағы. Керән ултыртыу.*

**2.** Шул үҫемлектең аш тәмләү өсөн файҙаланылған эсе тамыры. *Ҡырған керән.*

**КЕРӘНДИЛ** [*рус.* крендель ⟨*нем.*] *и.* Тәмле сөсө ҡамырҙан дүңгәләк итеп бешерелгән икмәк. *Ваҡ керәндил. Бер бәйләм керәндил.*

**КЕРӘНЛӘҮ** *ҡ.* Керән менән тәмләү.

**КЕРӘШ** [*рус.* кряж] *и.* Оҙон йыуан бүрәнә. *Тимер бик ҙур керәштәрҙе .. ботамай-нитмәй генә арбаһына тейәп бөтөрҙө, ти* (Әкиәттән).

**КЕРӘШЕН** [*рус.* крещёный] *и.* **1.** Мосолмандан христиан диненә күскән кеше.

**2.** *күсм.* Үҙ һүҙле, тиҫкәре кешене шелтәләгәндә әйтелә.

**КЕРӘШӘ** *и. диал.* Яр ҡарлуғасы.

**КЕС, кес-кес** *өнд.* Йәш баланы кесе ярауға өндәгәндә әйтелә.

□ **Кес итеү** *бал.* кесе ярау итеү.

**КЕСАҘНА** *и.* Аҙнаның дүртенсе көнө. *Кесаҙна көнө.*

**КЕСЕ** *с.* **1.** Кемдәндер йәше бәләкәй; *киреһе* оло. *Ике йәшкә кесе булыу.* ■ *Квартира хужаһы бер пенсионер ҡатын. Беҙҙең йәштәрҙәге бер ҡыҙы, унан кесерәк бер улы бар.* С. Агиш. / Йәшкә иң бәләкәй; кинйә. *Кесе ҡыҙ. Кесе ул.* ■ *Булған, ти Аҡбулат тигән бер бабай менән Һылыубикә тигән бер әбей. Уларҙың булған, ти, өс улы, таҙ булған, ти, кесе улы* (Әкиәттән).

**2.** Вазифаһы, дәрәжәһе яғынан бәләкәй. *Кесе ғилми сотрудник. Кесе лейтенант.*

**3.** *кар.* **бәләкәй** [1] 1.

♦ **Кесе бәйел[ле]** *кар.* **бәйел. Кесе Етегән** *кар.* **етегән. Кесе йома** *кар.* **йома. Кесе йәштән** бала саҡтан, бәләкәйҙән. **Кесе телгә лә йоҡмау** *кар.* **йоғоу. Оло башын кесе итеп** *кар.* **оло.**

● *Бер олоноҡон, бер кесенекен тыңла.* Мәҡәл. *Оло өйгә ни кәрәк — кесе өйгә лә шул кәрәк.* Мәҡәл.

**КЕСЕЙӘ** [*рус.* кисея] *и.* Үтә күренмәле бик йоҡа нәфис туҡыма. // *Кесейә күлдәк. Кесейә яулыҡ.* ■ *Ай, салҡан ятып яңғыҙ болот өҫтөнә, серемгә талған, кесейә ҡаплап нурлы битенә.* Ш. Бикҡол. *Баҙарҙарға барып ниҙәр алдың? Ун алты ла аршын кесейә* (Халыҡ йырынан).

**КЕСЕЛЕК** *и.* Түбәнселекле, ихтирамлы мөғәмәлә. *Кеселек менән өндәшеү. Кеселек күрһәтеү.*

**КЕСЕЛЕКЛЕ** *с.* Кеше алдында үҙен бәләкәй итеп тотоусан; түбәнселекле. *Кеселекле булыу.*

■ *[Әбей:] Балаларым бик һәйбәт, кеселекле, кеше өсөн эллә ни эшләргә тора.* Р. Низамов.

**КЕСЕЛЕКЛЕК** *и.* Үҙеңде бәләкәй, кесе итеп һанау сифаты. *Йәш батыр, кеселеклек күрһәтеп тәүҙә [көрәштән] баш тарта, әммә халыҡ һүҙен ергә йыҡмай .. уртаға сыға һәм Көсләбай менән алыша башлай.* „Ҡуҙыйкүрпәс менән Маянһылыу".

**КЕСЕЛӘҮ** *ҡ.* Кесе тип, бәләкәй тип ҡарау. *Ололарҙы ололау — яҡшылыҡтың билдәһе; кеселәрҙе кеселәү — кешелектең билдәһе* (Ҡобайырҙан).

**КЕСЕРТКӘН** *и.* **1.** Киртләс япраҡлы, оҙон ҡаты һабаҡлы саға торған үҫемлек. *Ваҡ кесерткән. Ата кесерткән. Инә кесерткән. Кесерткән япрағы. Кесерткән ашы.* ■ *[Беҙ] әҙәм буйы булып үҫкән кесерткәндәрҙән сағыла-сағыла .. йылға буйына йүгерҙек.* Ф. Иҫәнғолов.

**2.** Шул үләндең һабағынан алынған сүс. *Кесерткән иләү. // Кесерткән туҡ. Кесерткән бау.*

◆ **Кесерткән биҙгәге** тәнде сабырттыра, ныҡ ҡысындыра торған ауырыу. **Кесерткән ебәге** үләнгә сырмалып, һутын һурып үҫкән йылтыр еп һабаҡлы үлән. **Һаңғырау кесерткән** дүрткелерәк киртләс япраҡлы, йөнтәҫ һабаҡлы, ваҡ ҡына алһыу сәскәле саҡмай торған сүп үлән.

**КЕСЕРТКӘНЛЕК** *и.* Кесерткән үҫкән урын. *Кырандас һалдаттар менән тыңләшкәндә, ул [Хәбир] кесерткәнлеккә боҫоп, тегеләрҙе ҡарап ята ине.* Ә. Вахитов.

**КЕСЕРТТЕРЕҮ** *ҡ. диал.* Сағыу (кесерткәнгә ҡарата). *Кесерткән кесерттерә.*

**КЕСЕРӘЙЕҮ** *ҡ. ҡар.* **бәләкәсәйеү.**

**КЕСЕРӘЙТЕҮ** *ҡ. ҡар.* **бәләкәсәйтеү.**

◆ **Кесерәйтеү ялғауы** *лингв.* һүҙгә бәләкәйлек төшөнсәһе бирә торған грамматик ялғау.

**КЕСКЕНӘ** *с. ҡар.* **бәләкәс.**

**КЕСКӘЙ** *с. ҡар.* **бәләкәс.**

**КЕСКӘНТӘЙ** *с. диал.* Бәләкәс кенә.

**КЕҪӘ** [*фарс.*] *и.* **1.** Әйбер һалыу өсөн кейемгә ҡуша тегелгән моҡсай рәүешендәге нәмә. *Эске кеҫә. Ян кеҫә. Алъяпҡыс кеҫәһе. Ҡуйын кеҫәһе. Салбар кеҫәһе. Түш кеҫәһе. Кеҫә ҡапҡасы. Кеҫә ҡуйып тегеү. Кеҫәгә тултырыу. Кеҫәгә һалыу. Ҡулды кеҫәгә тығыу. Кеҫә сәғәте. Кеҫә фонары.* ■ *Аҡтүбәгә еткәндә, минең кеҫәмдә бары егерме тин аҡса ҡалған ине.* Т. Йәнәби.

**2.** *күсм. һөйл.* Аҡса менән иҫәпләнгән байлыҡ; аҡса. *Кеҫә яғы самалы. Кеҫә һай.* ■ *Аҡ мамыҡтан бәйләгән шапка алырға бик дәртләнгәйнем дә кеҫә һайлыҡтан тыйылдым.* «Ағиҙел», 1971, № 3. **Кеҫәгә һуғыу** аҡсаға көс килеү, аҡсаны кәметеү. **Кеҫә ҡалынайтыу** аҡса туплау, байлыҡ йыйыу. **Кеҫә һайығыу** (*йәки* **таҡырайыу**) аҡса әҙәйеү, аҡса бөтөү. **Кеҫәһе ҡалын** *йәки* **ҡалын кеҫә** аҡсаға бай, байлығы күп. *Уларға [байҙарға] ни булыр тиһең, уларҙың кеҫәләре ҡалын, ике донъяны бер юлы һатып ала алалар.* һ. Дәүләтшина.

**КЕҪӘКӘЙ** *и. диал.* Кеҫәртке.

**КЕҪӘЛ** *и.* **1.** Һоло ононан әсетеп, ҡайнатып бешергән һалҡын аш. *Һөтлө кеҫәл. Кеҫәл әсетеү.*

**2.** Крахмалға шәкәр, емеш һуты ҡушып ҡайнатҡан әсемлек. *Емеш-еләк кеҫәле.*

**КЕҪӘРТКЕ** *и.* Оҙонса кәүҙәһе ҡаты тәңкә ҡау менән ҡапланған оҙон ҡойроҡло, йылғыр хәрәкәтле, һөйрәлеүсе ваҡ йәнлек. *Һары кеҫәртке. Йәшел кеҫәртке.*

**КЕҪӘҮ** *и. диал.* Тәртешкә.

**КЕ́ТА** [*рус.* ⟨*нан.*] *и.* Ите һәм ыуылдырығы ҡыҙғылт алһыу төҫлө, ҡабырғаһы биҙәкле, һөмбаштар ғаиләһенә ҡараған эре диңгеҙ балығы. *Ҡаҡлаған кета. Тоҙлаған кета. Кета ыуылдырығы.*

**КЕТЕЙ-КЕТЕЙ** *саҡр. диал. ҡар.* **сип-сип** 2.

**КЕТЕ-МЕТЕ** *и. ҡар.* **ҡыты-мыты.**

**КЕТЕР-КЕТЕР** *оҡш.* Ҡаты, мурт нәмәне ваҡлағанда, кимергәндә сыҡҡан тауышты белдергән һүҙ. *Кетер-кетер кетермәс ашау.* ■ *Көндөҙ өйрәк күлдә йөрөй быҡыр-быҡыр, кәзә йөрөй тал кимереп кетер-кетер.* С. Ҡудаш.

**КЕТЕРЛӘТЕҮ** *ҡ.* Кетер-кетер иттереү, кетер-кетер иткән тауыш сығарыу. *Кетерләтеп кимереү.*

**КЕТЕРЛӘҮ** *ҡ.* Кетер-кетер килеү, кетер-кетер итеү. *Кетерләп торған шөкәрә.* ■ *Таба ла табылды, балыҡ та ҡыҙҙырылды. Кетерләп кенә тора.* Ғ. Ибраһимов.

**КЕТИ-КЕТИ** *ҡар.* **ҡытый-ҡытый.**

**КЕТКЕЛДӘК** *и.* Кеткелдәп көлгән кеше.

**КЕТКЕЛДӘҮ** *ҡ.* Кет-кет итеп йомшаҡ ҡына көлөү. *Кеткелдәп көлөү. Кеткелдеге сығыу.* ■ *[Әбей] тыйнаҡ ҡына итеп кеткелдәп көлөп ебәрҙе.* Ә. Вахитов.

**КЕТКЕЛДӘШЕҮ** *ҡ. урт. ҡар.* **кеткелдәү.**

**КЕТ-КЕТ** *оҡш.* Йомшаҡ ҡына итеп ихлас көлгәндә сыҡҡан өҙөк-өҙөк тауышты белдергән һүҙ. *Кет-кет көлөү.*

**КЕТМЕР** *с.* **1.** *ҡар.* **бөтмөр.**

**2.** (*баш хәреф менән*) Эт исеме.

**КЕТМӘ** [*фарс.*] *и.* Йәшерен эшләгән ялған документ. *Ул [ҡағыҙ] аҫтыртын ҡултамғалар һалдырып, анықланған .. бер кетмә ине.* Т. Хәйбуллин.

**КЕТӘК** *и.* **1.** Тауыҡтар төнәй торған урын. *Кетәккә ҡунаҡлау.*

**2.** Тауыҡтар торған бәләкәй өй. *Боронго тауыҡ кетәге кеүек ыҙмалар нигеҙҙәренән һүтеп ташланған.* М. Ғафури. / Ҡошсолоҡ фермаһының тауыҡ торған йорто. *Таштан һалынған өс тауыҡ кетәге алыҫтан уҡ күҙгә бәрелеп тора. Уларҙың эргәһендә — себеш кетәге менән йоморҡа склады.* «Совет Башҡортостаны», 1967, 7 ғинуар.

**КЕҮЕК** *бәйл.* **1.** (*исем төп килештә, алмаш эйәлек килештә*) Кем йәки нимәнеңдер сифатын, ҡылығын икенсе менән сағыштырғанда, уға оҡшатҡанда ҡулланыла; һымаҡ, шикелле. *Ай кеүек һылыу. Йәшел хәтфә кеүек болон. Көҙгө кеүек йылтыр. Шәм кеүек шыршы. Уның кеүек эшләү. Былбыл кеүек һайрау.* ■ *Тирмән тора көмөш кеүек йылға ярында.* Салауат Юлаев. *Мин дә маймыл кеүек, Новиков ни ҡыланһа — шуны ҡыланам.* Д. Юлтый. *Күрегеҙсе, епкә теҙгән кеүек, ҡаңғылдашып улар осалар.* Ғ. Мәсғүт. *Ҡолаҡтар сыңлай, баш тубал кеүек.* Д. Исламов.

**2.** Шартлы фараз төшөнсәһе биреү өсөн ҡулланыла. *Эшләп булмаҫ кеүек.* ▬ *Инде тағы ни генә әйтһәм дә, килешмәҫ кеүек тойола.* Т. Йәнәби. *Һөйөүең дәртте ҡандырыр кеүек, ә яҡын барһам, яндырыр кеүек.* Р. Низамов. / Самалап, икеләнеп әйткәндә ҡулланыла. *Ҡыҙыҡ кеүек булды.* ▬ *Уның танауы менән ауыҙы артыҡ бәләкәй кеүек күренде.* С. Агиш.

**3.** Сағыштырыу әйәрсен һөйләмдәрен теркәү өсөн ҡулланыла. *Беҙ көлдөк, ҡарсыҡҡа ҡаршы һүҙ әйтмәнек, сөнки үҙебеҙҙең алма икәнде дөрөҫләй алмаған кеүек, картуф кеүекте лә дөрөҫләй алмай инек.* С. Агиш.

**КЕҮӘҪ** [*рус.* квас] *и.* Арыш оно йәки икмәге иҙелгән һыуға сүпрә һалып әсетеп эшләгән эсемлек. *Кеүәҫ әсетергә ҡуйыу.*

**КЕҮӘТӘ** *и. диал.* Сеүәтә.

**КЕФА́ЛЬ** [*рус.* ⟨ *гр.*] *и.* Ялпаҡ ҡына оҙонса диңгеҙ балығы.

**КЕФИ́Р** [*рус.*] *и.* Үҙенә бер төрлө бәшмәк һалып ойотолған һөт аҙығы.

**КЕҺ-КЕҺ** *оҡш.* Йомшаҡ ҡына йүткергәндә, көлгәндә сыҡҡан тауышты белдергән һүҙ. — *Кеһ-кеһ-кеһ! — тип Шымбай ҡарт .. кеткелдәп көлөп алды.* З. Биишева.

**КЕШ** *и.* **1.** Һыуһарҙар ғаиләһенә ҡараған ҡараһыу көрән төҫтәге аҫыл тиреле йыртҡыс йәнлек. *Ҡара кеш. Кеш тиреһе.*

**2.** Шул йәнлектең тиреһе. *[Иҙеүкәй — Мораҙымға:] Һин яманды тыуҙырып, ҡалҡай ҡамҡа түшәттем, Ҡалҡай ҡамҡа ҡаты тип, ҡара кешкә биләттем.* «Иҙеүкәй менән Мораҙым». / / *с. мәғ.* Шул йәнлектең тиреһенән тегелгән. *Кеш бүрек. Кеш тун.*

**КЕШЕ** *и.* **1.** Фекер йөрөтә, һөйләшә, эш ҡоралдары яһай һәм уны файҙалана белгән, иң юғары аҡыл кеүәһенә эйә йән эйәһе; әҙәм. *Бынан 1—1,5 миллион йыл элек Ерҙә кеше барлыҡҡа килә.* Д. Бураҡаев. / Туғанлыҡ мөнәсәбәте, йәш һәм енес яғынан бүленеү буйынса билдәле бер төркөмгә ҡарағанлыҡты белдерә. *Ир кеше. Бала кеше. Ҡатын кеше. Оло кеше. Йәш кеше. Ҡарсыҡ кеше.* / Үҙенә хас сифаттар менән ҡылыҡһырланған шәхес. *Белемле кеше. Ипле кеше. Көслө кеше. Күңелле кеше. Тырыш кеше. Тәртипле кеше. Дуҫ кеше. Уҡытыусы кеше. Һөнәр кешеләре.* ▬ *Ғәйни ағай былай йыуаш тәбиғәтле кеше ине.* Т. Йәнәби. **Ҙур кеше** юғары вазифалы, абруйлы кеше. / Ниндәй ҙә булһа уртаҡ сифаттары менән айырымланған, билдәле бер мөхиткә, ойошма, төркөмгә һ. б.-ға ҡараған шәхес. *Ауыл кешеһе. Фән кешеһе. Ҡала кешеһе.* **Өй кешеһе** ҡатын-ҡыҙ. / Йән башынан иҫәпләү берәмеге. *Ун ике кеше килде. Биш кешенән торған ғаилә.*

**2.** Юғары рухи һәм мораль сифаттарға эйә булған шәхес. *Кеше итеү.* ▬ *[Майһылыу — Әхмәткә:] Мин һинән кеше сығыр тип уйлағайным. Булмағас, булмай икән.* Б. Хәсән. *Ҡайғы-шатлыҡтарҙы йөрәгенән үткәреүсе, ярата һәм нәфрәтләнә белеүсе, ижад утында яныусы, шул уттың ғазабын һәм рәхәтен татыусы кеше булып йәшәгем килә минең.* И. Абдуллин.

**3.** Күмәк шәхес; халыҡ. *Кеше йыйылғас. Кеше алдына сығыу.* ▬ *Алда ла, артта ла, уңда ла, һулда ла кеше лә кеше. Ҡулдарында флагтар, сәскәләр.* И. Насыри.

**4.** Туғанлығы, яҡынлығы булмаған сит кеше. *Кеше балаһы. Кеше нәмәһе.* **Кеше ҡулына ҡалыу** сит кеше тәрбиәһенә, кеше ҡарамағына ҡалыу.

♦ **Кеше булыу** 1) үҫеп, үҙ көнлө булыу. *Балалар кеше булып бөттө;* 2) һауығыу, шәбәйеү. *[Карам ағай:] мине лә үҙегеҙҙе лә борсомағыҙ инде, доктор. Мин кеше булыуҙан үҙғанмын. Тыныс ҡына үлергә ирек бирегеҙ.* «Ҡайнар йөрәкле кешеләр», 1967. **Кеше көнлө булыу** сит әҙәм ярҙамына мохтаж булыу. **Кеше көсө** эшләрҙәй кеше, эш кешеһе. *Яуыл ярлылары бергә тупланып, береһенән ат, икенсеһенән һабан, өсөнсөһөнән кеше көсө алып, бер табандан эшләһә, игенде еңел сәсерҙәр ине.* Ғ. Дәүләтшин. **Кеше рәтенә инеү** 1) тормошта, йәмғиәттә башҡалар кимәленә күтәрелеү, үҙ урынын алыу; 2) ҡаты сирҙән ҡотолоп шәбәйеү, йүнәлеү. **Кеше тотоу** хеҙмәтсе, йомошсо тотоу. **Күҙ кешеһе** *ҡар.* **кешелек** [2]. **Эшем кешеһе** эшлекле булып ҡыланған кешегә мыҫҡыллап әйтелә.

● *Кеше булмаған кеше өсөн кеше ҡайғыһы төштән һуң.* Әйтем. *Кеше менән кеше араһы — ер менән күк араһы.* Әйтем. *Кеше малы тирсел, кеше кейеме керсел.* Мәҡәл.

**КЕШЕ-КӨН** *и.* Бер кешенең тулы эш көнөнә нигеҙләп алынған хеҙмәт үлсәү берәмеге. *Бер тонна ашлыҡты эшкәртеү өсөн 2—2,5 кеше-көн кәрәк.* «Совет Башҡортостаны», 1965, 13 февраль.

**КЕШЕКӘЙ** *и. һөйл.* Таныш түгел, билдәһеҙ кеше. *Бер кешекәй килде.*

**КЕШЕ-ҠАРА** *и.* Ниндәй ҙә булһа кеше; кеше-фәлән. *Дала, осо ҡырыйы юҡ тип-тигеҙ дала. .. Һис бер ауыл, кеше-ҡара күренмәй.* И. Көҫәпҡол.

**КЕШЕЛЕК** [1] *и.* **1.** Бөтә булған кешеләр, кешеләр йәмғиәте. *Кешелек йәмғиәте. Кешелек донъяһы.* ▬ *Әле һуғыш, әле ҡорбандар бар, һәм хәүефтә әле кешелек.* Х. Ғиләжев.

**2.** Кешегә хас сифаттар. *Эш кешенең кешелеген дә, дәрәжәһен дә арттыра.* М. Ғафури. *Уйланыу, уйлана белеү — кешенең кешелеген күтәрә, аҡылын сафландыра торған шарт.* Ә. Вахитов.

**3.** Кешене аяу, ҡыҙғаныу тойғоһо, йомшаҡ күңеллелек. *Яҡтыға килеп ингәс, [туҡмалған] ике кешенең ҡиәфәтен күреү .. боласыларҙа кешелек тойғоларын уятҡан кеүек булды.* А. Карнай.

♦ **Кешелектән сығарыу** 1) бик ныҡ яманлау. *Кешелектән сығарып һүгеү;* 2) эшлектән сығарыу (мәҫ. туҡмап, сиргә дусар итеп һ. б.) **Кешелектән сығыу** 1) эшкә яраҡһыҙланыу. *Ул ныҡ сирләне, кешелектән сыҡты;* 2) бик ныҡ арыу, йонсоу. *[Кәрим бай:] Уф, тамам кешелектән сығып, алйып бөттөм.. Әйтергә генә анһат, ярты көн әсендә ҡаланы тотош әйләнеп сыҡ әле.* Х. Ибраһимов.

**КЕШЕЛЕК** [2] *и.*, күҙ кешелеге Күҙҙең иң уртаһындағы, шәүлә төшкән ҡара нөктә. *Кешелеген шекәрә ҡаплаһа, кеше һуҡырая.*

**КЕШЕЛЕКЛЕ** *с.* Кешегә ярҙамсыл мәрхәмәтле һәм шәфҡәтле; кеше йәнле. *Бул һин, Ан-*

*саф, атайыңдай тәүфиҡлы һәм кешелекле.* Н. Нәжми.

● *Кешенеке менән кешелекле.* Әйтем.

**КЕШЕЛЕКЛЕК** *и.* Кешегә ярҙамсыл, мәрхәмәтле, шәфҡәтле булыу сифаты.

**КЕШЕЛЕКЛЕЛЕК** *и. кар.* **кешелеклек.**

**КЕШЕЛЕКҺЕҘ** *с.* Кешегә ярҙам итергә тырышмаған, мәрхәмәтһеҙ, шәфҡәтһеҙ. *Аслыҡ йылдың зарары, бер татарҙың кешелекһеҙлеге менән Мәрйәм шул рәүештә Кавказға китте.* М. Ғафури.

**КЕШЕЛӘРСӘ** *р.* Ғәҙәттәге йүнле кеше кеүек; әҙәмсә. *Кешеләрсә һөйләшеү.* ■ *Кешеләрсә ысын үлеме бар йәшәй белгән ысын һәр ирҙең.* М. Хәй.

**КЕШЕЛӘШТЕРЕҮ** *ҡ.* Әҙәми зат һүрәтенә килтереү, кеше итеү. *Тәбиғәт күренештәрен кешеләштереп һүрәтләү.*

**КЕШЕНЛӘТЕҮ** *ҡ. йөкм. кар.* **кешенләү.** *Атты кешенләтеү.*

**КЕШЕНЛӘҮ** *ҡ.* Иһа-һа тип ҡысҡырып тауыш биреү (йылҡы малына ҡарата); кешнәү. *Бейә ҡолонона кире килеп, һарай уратып сабыулап, кешенләп йөрөй.* «Ағиҙел», 1969, № 5. / *күсм. мыҫҡ.* Йәмһеҙ итеп, ихахайлап көлөү.

**КЕШКӘЙ-КЕШКӘЙ** *кыу.* Бейә ҡыуғанда әйтелә.

**КЕШМИР** [*гәр.*] *и.* Йөн йәки йөн ҡатыш йоҡа туҡыма. *Аҡ кешмир.* // *Кешмир яулыҡ.* ■ *Ҡыҙҙың өҫтөндә һәйбәт итеп тегелгән ҡара ҡыҙыл кешмир күлдәк.* Ә. Вәли.

**КЕШНӘТЕҮ** *ҡ. йөкм. кар.* **кешнәү.** *[Күсәрхан кешеләре] көтөү-көтөү малдарын әйләп, йылҡыларын кешнәтеп, һыйырҙарын мөңрәтеп .. күсеп киттеләр, ти* (Әкиәттән).

**КЕШНӘҮ** *ҡ.* Ҡысҡырып тауыш биреү (йылҡы малына ҡарата); кешенләү. *Бер ҙур яллы ат кешнәй-кешнәй көтөү әҙләп йөрөй.* Ш. Шәһәр. / *күсм. мыҫҡ.* Йәмһеҙ итеп, ихахайлап көлөү.

**КЕШНӘШЕҮ** *ҡ. урт. кар.* **кешнәү.** *Арыраҡ бер нисә ат кешнәшеп юртып йөрөй.* Ғ. Хөсәйенов.

● *Ат кешнәшеп, кеше һөйләшеп танышыр.* Мәҡәл.

**КЕШТЕРТ-КЕШТЕРТ** *окш. кар.* **ҡыштыр-ҡыштыр.**

**КЕШТӘК** *и.* Күлдәктең ҡултыҡ аҫтына, ыштандың балаҡ төбөнә ҡыҫтырып тегелгән дүрткел ҡорама. *Бала итәктәрҙең бөрөләүе ҡаланыҡыса булмаһа ла, уйып ҡуя торған ең төбө урынына башҡортса кештәк ҡуйылһа ла, күлдәк матур булып сыҡты.* Һ. Дәүләтшина.

**КЕШТӘКЛӘҮ** *ҡ.* Кештәк ҡуйыу. *Кештәкләп тегеү.*

**КЕШШӘ** *кыу.* Ҡош-ҡорт ҡыуғанда әйтелә.

**КЕШӘМЕШ** *и.* Ат аяғының тышау һала торған бәкәлдән өҫкө ере.

**КЕШӘН** *и.* Йылҡы малының алғы аяғын артҡы аяғының бөгәр өҫтөнә тарттырып бәйләгән бау.

● *Кешәнле ат кәрәгенән ары йөрөмәҫ.* Мәҡәл.

**КЕШӘНЛӘНЕҮ** *ҡ. төш. кар.* **кешәнләү.**

**КЕШӘНЛӘТЕҮ** *ҡ. йөкм. кар.* **кешәнләү.** *Атты кешәнләтеү.*

**КЕШӘНЛӘҮ** *ҡ.* **1.** Кешән һалып тышау (йылҡы малын). *[Ҡуҙыйкүрпәс] аттарын кешәнләп утларға ебәрә лә, үҙе ҡамыш өҫтөнә ятып йоҡлай.* «Ҡуҙыйкүрпәс менән Маянһылыу».

**2.** *диал. кар.* **кеҙәләү** [1]. *Кешәнләп һауыу.*

**КЕШӘНӘҮ** *ҡ. кар.* **кешенләү.**

**КИ** *терк. иҫк.* **1.** Эйәртеүле ҡушма һөйләмдә һөҙөмтә һөйләмде баш һөйләмгә теркәү өсөн ҡулланыла. *Башҡортостан ауыл хужалығы шул ҡәҙәр ауырлыҡҡа төштө ки, әле булһа үҙенең элекке хәленә килә алмай.* «Совет Башҡортостанының ун йылы», 1929. *Хәрби кеше һүҙҙәрен шундай асыҡ итеп әйтте ки, шул тирәләге кешеләр .. боролоп ҡарарға мәжбүр булды.* А. Хәлим.

**2.** Эйәртеүле ҡушма һөйләмдәрҙә эйә һәм тултырыусы һөйләмде баш һөйләмгә теркәү өсөн ҡулланыла. *[Сабир мулла:] Мәғлүм булһын ки, беҙ фәҡирегеҙ бик ауыр хәлдәргә ҡалдыҡ.* Б. Ишемғол. *Егеттәр, йөрөмәгеҙ иҫтән яҙып. Аңлағыҙ ки, ҡыҙҙарға ҡыҙмай йөрөү шикһеҙ яҙыҡ.* Ш. Бабич.

♦ **Хатта ки** эш-хәлдең юғары дәрәжәһен белдерә. *Их, бөгөн ожмах көнөнән йәмле көн. Ҡайҙа ожмах! Фирҙәүес бер яҡта торһон хатта ки!* Ш. Бабич.

**КИБАР** [*гәр.*] *с. иҫк. кит.* Ҙур, бөйөк. *Мал юҡ унда, әммә бик саф күңеле бар. Ул күҙен һалмай насарлыҡҡа, уның йәне кибар!* М. Ғафури.

**КИБАРИ** [*гәр.*] *с. иҫк. кит.* Эре, ғорур. *[Ғафури] үҙен гәйәт кибари тотто.* С. Ҡудаш.

**КИБЕГЕҮ** (кибек*г*) *ҡ.* **1.** Нык сарсап, эс, тамаҡ кибеү; һыуһау.

**2.** Нык ябығып кибеү; һурылыу. *[Аҡназарҙың] тамағына аш үтмәй .. кибегә башлай, йөҙө ап-аҡ сепрәк кеүек булып ҡала* (Әкиәттән). / *күсм.* Моң-зарҙан кибеү; һарыға һабышыу, һарғайыу.— *Минең ер йөҙөнә сыҡҡым, тыуған ерҙәремде күргем килә,— ти Заятүләк,— бында кибегеп ултырыр хәлем юҡ.* «Заятүләк менән Һыуһылыу».

**КИБЕЖӘ** [*ҡаҙ*] *и. кар.* **кибәҙә** 2. *Кейем-һалым тултырылған кибежәләр һәм ҡалайлы һандыҡтар ҙа ошо өйҙә ине.* Ғ. Ғүмәр.

**КИБЕКТЕРЕҮ** *ҡ.* **1.** Тамаҡты киптереү; сарсатыу. *Эҫе ел кибектерҙе.*

**2.** Ябыҡтырыу; ҡаҡ һөйәккә ҡалдырыу.

**КИБЕНЕҮ** *ҡ.* Өҫ-башты, өҫтәге кейемде киптереү. *Кибенеп алыу.*

**КИБЕР** [*гәр.*] *и. иҫк. кит.* Ғорурлыҡ, тәкәбберлек. *Илаһым миңә кибер вә рыяһыҙ гилем вә гәмәл бир.* М. Өмөтбаев.

**КИБЕРНЕ́ТИК** [*рус.*] *и.* Кибернетика буйынса белгес.

**КИБЕРНЕТИ́К** *с.* Кибернетикаға мөнәсәбәтле, кибернетикаға бәйле.

**КИБЕРНЕ́ТИКА** [*рус.* ⟨ *гр.*] *и.* Төрлө (механик, электрик, физиологик һ. б.) процестарға идара итеү системаһы, формаһы, методтары һәм алымдары тураһындағы фән.

**КИБЕРҺЕҘ** *с. диал.* **1.** Һынһыҙ, шыҡһыҙ.

**2.** Тыңлауһыҙ.

**КИБЕС** [*ҡаҙ.*] *и. диал. кар.* **кәүеш** [1].

♦ **Кибесле ҡата** *диал.* арты бейек ҡата.

**КИБЕТ** *и. һөйл.* Төрлө нәмәне берәмекләп һата торған сауҙа бинаһы; магазин. *Баҙар кибете. Ит кибете. Таш кибет.* ■ *Бик шәп нәмәләр алдым бит, бөгөн кибеттән.* Ф. Рәхимғолова.

*Уралбай өйөнөң аҫкы катында кибет аскан. Әммә сауҙа эшен үҙе алып бармай, бисәһенә кушкан* (Әкиәттән).

**КИБЕТСЕ** *и. иҫк.* Кибет хужаһы.

**КИБЕҮ** (кип≠) *к.* **1.** Һыуы, дымы бөтөп еүеш хәлдән короға әйләнеү. *Кипкән иген. Кипкән кирбес. Кипкән утын.* ■ *Сәгиҙә бер көндө, ер-һыу кипкәс, капка төбөндәге эскәмйәлә .. уйланып ултырҙы.* М. Тажи. / Тейешле дымы осоп, артык нык короу. *Баҫыуҙарҙың кипкән тупрагын койон осора.* Ә. Вәли. / Дымы, һуты бөтөп, короға, катыға әйләнеү. *Кипкән еләк. Кипкән эремсек. Иҙәндең буяуы кипмәгән.* ■ *Мәгфүрә .. кипкән һалма йәймәләрен кыркырга кереште.* Һ. Дәүләтшина. / Тәбиғи лайлаһы, һыуы бөтөп, короға әйләнеү. *Һөйләшеп булмай, ауыҙ кипкән.* Д. Юлтый. *Уның [Булаттың] тәне ут шикелле яна, ирендәре кибә.* М. Тажи. **Тамак кибеү** бик нык һыуһау. *[Маянһылыу — Колтор таҙга:] Бигерәк тамагым кипте, күлдән әҙ генә һыу алып бирер инең.* «Куҙыйкүрпәс менән Маянһылыу».

**2.** Корошоп, үле хәлгә килеү; короу, кыуарыу. *Кипкән агас.* ■ *Ялан гына ерҙең шипкәнен, елдәр түгә уның кипкәнен* (Халык йырынан).

**3.** *күсм.* Нык ябығыу. *Аслыктан кибеү. Кибеп, как һөйәккә калыу.* ■ *Кыҙ бөтөнләй йоконан мәхрүм кала, һаргайып, кибә башлай* (Әкиәттән).

**4.** Быуға осоп юкка сығыу. *Таңдан тороп хәҙер кырга сыгам ысык кипмәҫ борон гөлдәрҙә.* М. Кәрим. *Әбейҙең кибеп бөткән күҙ йәштәре яңынан тәгәрләй башланы* (Әкиәттән). / Эсендәге һыуы, шыйыклығы бөтөп, короға калыу; короу. *Һай, хәмерҙәр акты бөттө, кипте мискәләр тамам.* Ш. Бабич.

◆ **[Күҙ] йәше кибеү** илау-һыкрауҙан туктау. *Калкты ысын кояш, кипте йәш, капланды кара көс йөҙ түбән.* Ш. Бабич. **Кан кибеү** *кар.* **кан** [1]. **Танау аҫты кипмәгән** *кар.* **танау. Тир кипмәү** эштән бушамау.

● *Бер бейәнең ике имсәге — береһе кипһә, һөтө юк.* Мәкәл. *Тиреӊ кипмәһә, байлыгың китмәҫ.* Мәкәл.

**КИБЕШЕҮ** *к. диал.* Кибеп катыу. *Беҙ был кешенең .. сихут аркаһында агарып кибешкән икәнен күрҙек.* А. Карнай.

**КИБРИЯ** [*гәр.*] *и. иҫк.* Ғорурлык. *Төхфәтуллин йырсы, бакырыусы, мөфәссир кибрия. Үпкәләһәң, үпкә ашарһың: һәммә эштәрең рыя.* Ш. Бабич.

**КИБӘ** *и. диал. кар.* **сәсә** 3.

**КИБӘҘӘ** *и.* **1.** *һөйл.* Шыр такта; фанер.

**2.** Шыр тактанан капкаслап эшләнгән йәшник, ябай һандык.

**КИБӘТӘ** *и. диал.* Тирмә. *Кейеҙ кибәтәнең эстәрендә була икән егет солтаны* (Халык йырынан).

**КИВЕР** [*рус.* ⟨ *пол.*] *и. иҫк.* 18—19 быуаттарҙағы осло башлы, тирәсһеҙ хәрби бүрек.

**КИГЕРЛӘК** [1] *и. диал.* Боғарлак.

**КИГЕРЛӘК** [2] *и. диал. кар.* **кигермәк** 1.

**КИГЕРМӘК** *и.* **1.** Ағастың үле тукыманан барлыкка килеп, суғырмакланып торған калын каты кабығы. *Кайын кигермәге. // Кигермәк тыгын.* ■ *Карагай ҙа агас бик ҙур агас, юнып кына алһаң — кигермәк* (Халык йырынан).

**2.** *диал.* Калкыуыс.

**КИГЕРМӘКЛӘНЕҮ** *к.* Кигермәк хәленә килеү, кигермәклегә әйләнеү.

**КИГЕРТӘ** *и. диал.* Киртләс.

**КИҘҘЕК** *и. диал.* Киҙе.

**КИҘЕ** *и.* **1.** Уктың керешкә эләктерә торған киртекле асалы башы; киҙәү.

**2.** Уйып, киртеп алған урын; киртек. *Киҙеле багана. Курайҙың йыуан башын ауыҙга капканда, тешкә тереү, өсөн киҙе яһала.*

**КИҘЕҮ** [1] *и.* **1.** Бер-бер артлы килгән тәртип һәм шул тәртип эсендәге урын; нәүбәт, сират. *Киҙеү һаклау. Киҙеүгә тороу.* ■ *Фәһим менән Низай аҫкы урам малын көтә, өйҙән-өйгә йөрөп киҙеү буйынса ашай.* Ф. Иҫәнғолов. *Бай кыҙын карауыллау йәштәргә киҙеү менән килеп тора* (Әкиәттән).

**2.** Бер-бер артлы алмашлап башкарылған эш. *Киҙеү аткарыу.* ■ *Ашыгыс ярҙам станцияһында көнө-төнө бер врач, ике фельдшер киҙеүҙә тора.* «Совет Башкортостанының ун йылы», 1929. /*һөйл.* Шул эште башкарған кеше; дежур. *Киҙеү булһаң, шәкерттәрҙе намаҙга кыуаһың, бармагандарҙы гөнаһлылар дәфтәренә яҙып, казый әфәндегә бирәһең.* М. Ғафури. *Өсөнсө көнөнә өйҙә киҙеү булып Камыр батыр калган* (Әкиәттән).

**3.** Хужа кешегә эш коралын файҙаланған өсөн бирелгән өлөш; түләү, гәрнис. *Киҙеү биреү.* ■ *Ике күнәк һөт һыйышлы сипарат алды Гәрәй .. Күршеләр сипаратка йөрөй, аҙна һайын киҙеү түләй.* Б. Бикбай.

**КИҘЕҮ** [2] *и.* Кешенән кешегә күсеп йөрөгән йоғошло ауырыу (тымау һ. б.). *Ваба киҙеүе. Һары киҙеүе. Киҙеү тейгән.* ■ *Тапма киҙеүе уҙып, күҙен асканда, [Емештең] янында бойогоп кына Бибеш апаһы ултыра ине.* З. Биишева. *Бабай кайтыуга өс улының өсөһө лө киҙеү менән ауырып үлгән* (Әкиәттән).

**КИҘЕҮЛӘҮ** [1] *к.* Билдәле тәртип буйынса алмашлау; сиратлау. *Киҙеүләп эшләү. Киҙеүләп һакта тороу.* ■ *Былар [батырҙар] өйҙә көн дә киҙеүләп калырга булды, ти* (Әкиәттән).

**КИҘЕҮЛӘҮ** [2] *к.* Киҙеү менән ауырыу.

**КИҘЕҮЛӘШЕҮ** *к.* Үҙ-ара алмашлашыу; сиратлашыу. *Киҙеүләшеп эшләү.*

**КИҘЛӘҮ** *к. иҫк.* Йәшереү.

**КИҘӘҒӘЙ** *и.* **1.** Йылкының аҫкы яңак һөйәге.

**2.** *диал.* Теш ите.

**КИҘӘК** [1] *и. кар.* **киҙеү** [1] 1, 2. *Беренсе киҙәккә куйыу. Киҙәк менән һүҙ һөйләү. Киҙәктәге кеше.* ■ *Сәгиткә лә киҙәк килеп етте, уны сакырып индерҙеләр.* А. Таһиров. *[Карас батыр:] каҙагым, батыр булһаң, бирсе киҙәк, угымды мин атырмын һиңә төҙәп.* «Карас менән Акса».

**КИҘӘК** [2] *и. кар.* **тиҙәк** 2.

**КИҘӘМ** *с. диал.* Кире холоклo, кеҙе.

**КИҘӘНЕҮ** *к.* Һуғырга үкталып, кулды һелтәү. *[Урядник] Әхтәмгә киҙәнә лә, һуга алмай үҙе йыгыла.* Х. Ибраһимов.

● *Күркһеҙ биҙәнер, йөрәкһеҙ киҙәнер.* Мәкәл.

**КИҘӘҮ** [1] *к.* **1.** Уҡты киҙеһе менән керешкә ҡуйыу. *Уҡты киҙәү.*

**2.** Тоҫҡап атырға йәки бәрергә йүнәлтеү. *Халыҡ батыр булып баҫты, уға [фашистка] нәфрәтен киҙәп.* С. Кулибай.

**КИҘӘҮ** [2] *и. ҡар.* **киҙе.**

**КИЗЕ** [*фарс.*] *и.* **1.** Сигеү өсөн тәғәйенләнгән төрлө төҫтәге йөн йәки мамыҡ еп. *Кизе менән сигеү.* ■ *[Нәжипич] галстук урынына төрлө кизенән суклап эшләнгән үҙербау бәйләп ебәрергә ярата.* З. Биишева. / Шундай ептән һуғылған туҡыма. *Күлдәклек кизе. // Кизе ашаулыҡ. Кизе шаршау. Кизе яулыҡ.*

**2.** *диал. ҡар.* **тыжым** [1].

**КИЗЕЛЕ** *с.* Кизе ҡатыштырып һуғылған. *Кизеле ашаулыҡ. Кизеле шаршау.* ■ *[Шәрәфи:] Кизеле күлдәк. .. суклы бирсәткәләрҙе беҙ киймәй әллә кем киймәҫ инде.* Н. Ҡәрип.

**КИЗЕ-МАМЫҠ** *и.* Мамыҡ еп. // *Кизе-мамыҡ туҡыма.* ■ *Ойоҡ һәм ойоҡбаштың һалҡын миҙгелдә йөндән, ә йылы ваҡытта кизе-мамыҡтан бәйләнгәне яҡшы.* В. Ғүмәров.

**КИЙ** [*рус.* ⟨ *пол.*] *и.* Бильярд таяғы.

**КИК** *и. кит.* Үс, кенә. *Минең юҡ яҡшығыҙға эсемдә кик.* Аҡмулла.

**КИКЕЛ** *и.* **1.** Йылҡының маңлай сәсе. *Ирәле лә еккән пар күк ала, ял кикеле уйнай дуғала* (Халыҡ йырынан).

**2.** *диал.* Кикерек.

**3.** *диал. ҡар.* **супай** [1].

**КИКЕРЕК** *и.* Ашҡаҙандан ауыҙ аша бүленеп сыҡҡан һауа.

**КИКЕРЕНЕҮ** *к.* Ваҡыт-ваҡыт кикереп ҡуйыу. *Кикеренеп ултырыу.*

**КИКЕРЕҮ** *к.* Ашҡаҙандан бүленеп сыҡҡан һауаны ауыҙ аша сығарыу.

● *Бирәү түйып кикерә, бирәү туңып һикерә.* Әйтем.

**КИКЕРТЕҮ** *к. йөкм. ҡар.* **кикереү.** *Майлы аш кикертә.* ■ *Ауырыу башланғанда аппетит юғала, күңел болғана.., кикертә.* В. Ғүмәров.

**КИКРЕК** *и.* Ҡайһы бер ҡоштарҙың башындағы киртләсләнеп торған таж ите. *Күркә кикреге. Оҙан кикреге. Тауыҡ кикреге. Әтәс кикреге. Кикрекле тутый ҡош.* ■ *Ҡыҙыл кикрекле ап-аҡ тауыҡтар һыу эсергә төштөмө — Әйек буйындағы йәшел тигеҙлек ҡыҙыл биҙәкле аҡ юрған менән ҡаплана.* С. Агиш.

♦ **Кикрек кикреү** мин дә мин тип маһайыу; кәпәренеү. **Кикрек төшөү** бойоҡланыу, күңелһеҙләнеү. *Ғарифтың кикреге төшкәнен бер ҡарауҙа һиҙҙем: бурҫлаҡ бите һалпайған, күҙ ҡарашы бик бойоҡ.* Н. Мусин.

**КИКРИ-КҮК** *окш.* Әтәс ҡысҡырған тауышты белдергән һүҙ. *Ана тышта ҡанаттарын ҡағып, кикри-күк тип әтәс ҡысҡырҙы.* Т. Йәнәби.

**КИЛА** [*рус.*] *и. диал.* Сырхыуат. *Кила ҡағылыу.*

**КИЛБӘҘӘ** *и. ҡар.* **кибәҙә.**

**КИЛБӘТ** [*фарс.*] *и.* **1.** Тышҡы ҡиәфәт; төҫ-баш. *Оҡшаны кәлбең, һүҙең һәм нурға сумған килбәтең.* Ш. Бабич.

**2.** Тышҡы төҙөлөш; рәүеш. *Ғинуарҙың ҡырҡылған телен урынына ҡуйып ҡараһалар — килбәте килде, ти.* «Бабсаҡ менән Ҡусәк».

● *Килбәте ниндәй — күләгәһе шундай.* Әйтем.

**КИЛБӘТЛЕ** *с.* Һыны, рәүеше килешле, матур. *[Ҡарт] заманында ыҫпай, килбәтле ир булғанға оҡшай.* Д. Юлтый. // *Буйҙы-һынды бик килбәтле йөрөтә.* С. Ҡудаш.

● *Килен килбәтле булһын, һүҙе шәрбәтле булһын.* Әйтем.

**КИЛБӘТҺЕҘ** *с.* Һыны, рәүеше килешһеҙ, ямаҡ. *Килбәтһеҙ ҙур шкаф. // Килбәтһеҙ тотоноу.* ■ *Кармазинкай яға, ай күк сәкмән килбәтһеҙ ҙә иргә килешмәй* (Халыҡ йырынан).

**КИЛГЕЛӘҮ** *к.* Килеп-китеп йөрөү, ваҡыт-ваҡыт килеп китеү.

**КИЛГӘН-КИТКӘН** *с.* Килеп-китеп йөрөгән (кешегә ҡарата). *Заятүләк менән Һыуһылыу.. көн килгәнгә һөт биреп, төн ҡунғанға ут биреп, килгән-киткәнгә төйәк булып, оҙон, рәхәт ғүмер кисерә.* «Заятүләк менән Һыуһылыу».

**КИЛДЕ-КИТТЕ** *с.* **1.** Аҡылға бер төрлө, аҡылға еңелерәк булған; килделе-киттеле. *Килде-китте кеше. // Килде-китте һөйләнеү.* ■ *[Нурдәүләт:] Беҙҙең ауылда .. килде-киттерәк ҡатын-ҡыҙ булһа, «мәймүнә» тип ирештерәләр.* М. Хәйҙәров.

**2.** Етди булмаған, еңел, теләһә ниндәй; килделе-киттеле. *[Ханым:] Мин әле лә үҙемде килде-китте ҡыҙҙарҙан артыҡ һанайым.* Д. Исламов.

**КИЛДЕЛЕ-КИТТЕЛЕ** *с. ҡар.* **килде-китте.**

**КИЛДЕРҮШ** *с. диал.* Килде-китте.

**КИЛЕ** *и.* Онтау, йомшатыу өсөн төрлө нәмә төйә торған сөм һауыт. *Ағас киле. Суйын киле. Килелә етен төйөү. Килелә ярма төйөү.* ■ *[Кинйәбикә] башаҡты кәүҙәп, ҡыҙҙырып, киле лә төйөп, бутҡа бешерҙе.* Ж. Кейекбаев.

**КИЛЕМ** *и.* Хеҙмәттән йәки йыйымдан аҡсалата, нәмәләтә төшкән файҙа. *Колхоз ныгыны. Килеме меңдәр, миллиондар менән иҫәпләнә башланы.* Ғ. Лоҡманов. *Мәсет-мәҙрәсә килемдәре уның [Әптелгәлимдең] кеҫәһенә инеп .. һеңә бара.* Ф. Иҫәнғолов.

**КИЛЕМ-КИТЕМ** *и. йыйн.* Килгән-киткән кеше; ҡунаҡ-төшөм. *Килем-китем күп булды.* ■ *Бөтә килем-китем түй сығымын үҙем күтәрермен,— ти Кусәрбай.* Ҡ. Даян.

**КИЛЕМЛЕ** *с.* Килеме күп; төшөмлө. *Килемле эш. Килемле урын. Килемле хужалыҡ.*

**КИЛЕМ-ТӨШӨМ** *и. йыйн.* Хеҙмәттән йәки йыйымдан төшкән файҙа.

**КИЛЕМТӘК** *с. диал.* Кеше йәйлы, ыңғайлы. *Һуҙға килемтәк кеше.*

**КИЛЕМҺЕҘ** *с.* Килеме юҡ; төшөмһөҙ. *Килемһеҙ хужалыҡ.*

**КИЛЕН** *и.* Улдың ҡатыны. *Кесе килен. Оло килен. Килен алыу.* ■ *Бына, Гөлгәйшә, хәҙер килен булып төшәһең. Унда барғас та, .. ҡапыл арбанан төшмә, бер һыйыр килтерерҙәр, шуға таянып төш.* М. Буранғолов. / Әне тейеш йәки үҙеңдән кесе ауылдаш кешенең ҡатыны. *[Әбей:] Гөлбоҫтан килен, бынауы ҡаҡ юлда арбанан ҡолап, Аҡназарыңдың башы ярылыр, алла һаҡлаһын. Ҡана картыңдың башын таңып алайыҡ әле.* Ғ. Дәүләтшин. *Йәш килендәр уттай бешеп-янып, алтын көлтәләрҙе сисәләр.* Ғ. Мәсғүт. **Килен бүләге** оҙатылып килгәс, килен тараткан бү-

ләк. **Киленде оҙатып алыу** кейәүләп йөрөгәндән һуң ҡыҙҙы егет йортона алып ҡайтыу. **Киленде һыу башлатыу** килєнгә һыуға барыр юлды күрһәтеү (ҡыҙҙар йыйылып килеп, еңгәләрен һыуға алып китәләр; иң яҡын ҡәйенһеңлеһе күнәк-көйәнтәне һыуға барғанда күтәреп бара; килен ҡайтҡанда һыу күтәреп ҡайта ла бүләк өләшә). **Килен күрештереү** киленде егеттең туғандары менән таныштырыу. **Килен күрһәтеү йәки килен сәйе эсереү** килен төшкәс, нәҫел ырыуҙы саҡырып һыйлау. **Киленде малға таяндырыу** килгән киленде мал әйтеп арбанан төшөрөү (ҡәйнәһе төшөрә). **Килен төшөрөү** ҡыҙҙы егет йортона күсереп килтереү. **Килен урыны күрһәтеү** килен төшкәс, өйҙө күрһәтеү, бүләк мал әйтеү (егеттең ата-әсәһе әйтә). **Килен һөйөү** яңы төшкән киленде һөйөп, теләк теләп, бүләк биреү (уның өсөн күрше-күлән ҡатын-ҡыҙҙы ҡәйнә кеше сәйгә саҡыра). **Килен әйттереү** ҡыҙҙы һөйләшеп ҡоҙалашыу.

● *Улым, һиңә әйтәм, киленем, һин тыңла.* Әйтем.

**КИЛЕНДӘШ** *и.* Бер туған ағай-энеләрең ҡатындары (бер-береһенә ҡарата); апһын. *Ике килен-килендәш, береһе ялҡау, береһе йәш* (Халыҡ йырынан).

**КИЛЕНЕҮ** *к. әйһ. ф. кар.* **килеү** 2, 3, 12, 22. *Һуңлап киленгән. Ҡәтғи ҡарарға киленде. Был эш алдан тикшереп киленде. Ул һәр ваҡыт телгә алынып киленде.* ■ *— Әллә иртәрәк киленде инде?! Бәлки практикаға барыу файҙалыраҡ булғандыр?! — Шәриф бер минутҡа шулай уйланды.* Ә. Вәли.

**КИЛЕН-КИЛТӘН** *и. йыйн. һөйл.* Йәш ҡатындар, килендәр. *[Сәлимәләр янына] тағы бер төркөм килен-килтән, ҡыҙ-ҡырҡын килеп ҡушылды.* С. Кулибай.

**КИЛЕНКӘС** *и. кар.* **киленсәк.**

**КИЛЕНСӘК** *и. ирк.* Йәш килен. *Әйҙә, матур киленсәк, булма улай оялсаҡ* (Туй йырынан).

**КИЛЕП** *р.* **1.** Төп төшөнсәне көсәйтеү өсөн ҡулланыла; өҫтәүенә. *Юл ташлы, килеп текә.* Ж. Кейекбаев. **Килеп тороп** *һөйл.* бик ныҡ, бигерәк. *Килеп тороп ауыр. Килеп тороп шаян.*

**2.** Рәүеш төшөнсәле һүҙҙәр менән бергә эш-хәрәкәттәге үҙгәрешне күрһәтеү өсөн ҡулланыла. *Аҙаҡ килеп. Бер көн килеп. Бөгөн килеп.* ■ *[Диңгеҙ] ҡарапТарҙы ҡауырһындай осороп уйнатҡан-уйнатҡан да, ахыр килеп, далаларҙы баҫып киткән.* З. Биишева.

**КИЛЕП-КИТЕҮ** *к.* Бер килеи, бер китеү, килгеләү. *Килә-китә йөрөү.* ■ *Сыҡ турғай ике арала йомошсо булып, килеп-китеп йөрөгән, ти.* «Ҡуҙыйкүрпәс менән Маянһылыу».

**КИЛЕР** [1] *и.* Алда буласаҡ тормош; киләсәк. *Килерҙе уйлау.* ■ *Беҙҙең илдә күрә бөтә донъя, үҙенең, тыныс, яҡты килерен.* Ғ. Әмири.

**КИЛЕР** [2] *и. кар.* **килем.** *Айлыҡ .. килере тамаҡ хаҡына ла етмәне.* Д. Юлтый.

◆ **Килер ер** килем сығанағы, файҙа алыу мөмкинлеге. *Килер ерең киң булһын.*

**КИЛЕҮ** *к.* **1.** Бирегә, ниҙеңдер янына, яҡынына хәрәкәт итеү, яҡынлау. *Бер һыбайлы килә. Поезд килә. Самолет килә. Йүгерә-атлай килә. Килә ятыу.* ■ *Трактор боҙ өҫтөнә төшөп, башта арыу ғына килде.* Б. Бикбай. / Нимәлер ярҙамында бирегә табан хәрәкәт итеү. *Ат менән килеү. Самолетта килеү. Кәмәлә килеү. Поезд менән килеү. Һыбай килеү.* / Һауа менән бирегә хәрәкәт итеү йәки ағым менән бирегә табан ағылыу (болот, томан һ. б.-ларға ҡарата). *Болот килә. Боҙ килә. Һал килә.* ■ *Килә болот, килә ямғыр, китһен урман буйына* (Халыҡ йырынан). / Көтөү булып өйөрөлөшөп бирегә табан хәрәкәт итеү (ҡош көтөүе, күс, балыҡ һ. б.-ларға ҡарата). *Балыҡ әркеүе килә.* ■ *Матур моңло ҡоштар килә башлар инде аҡрынлап.* Ш. Бабич.

**2.** Хәрәкәт итеп, билдәле бер урынға етеү. *Күл ситенә килеү. Эргәгә килеү.* ■ *Ялбыр йөнлө Алабай .. сит-яҡ кеше килә ҡалһа, һаулап сығыр алабай.* Ғ. Амантай. *Иртән дә кил, кис тә кил, тәҙрәмде сирт тә кил* (Халыҡ йырынан). / Кире әйләнеп, бирегә етеү. *[Йәнтимер:] Әйҙә киттек Өфөгә! — тине.— Көҙгө, сентябргә өҫ-башты рәтләп килербеҙ.* С. Агиш. / Берәй маҡсат менән бирегә юл тотоу. *Йомошҡа килеү. Ҡунаҡҡа килеү. Уҡырға килеү. Ярҙам итергә килеү.* ■ *[Зәйнәп:] Райкомолда булдым.., иртәгә уҡ эшкә кил, тиҙәр.* Ғ. Сәләм. / Ҡатын булып ғаиләгә инеү, кейәүгә сығыу. *Көндәш өҫтөнә килеү.* ■ *[Ғәли Бәгиҙәгә:] Ҡарт тимәһәң, миңә кил дә ҡуй,— тип әйтеп һалды.* И. Ғиззәтуллин.

**3.** *күсм.* Берәй эш, хеҙмәт өлкәһенә инеү. *Сәнғәткә килеү. Фәнгә килеү. Әҙәбиәткә килеү.*

**4.** Ҡайҙандыр ебәрелеп, бирегә етеү, бирегә алыныу (хат, хәбәр, әмер, әйбер һ. б.-ға ҡарата). *Бойороҡ килде. Күстәнәс килде. Посылка килде. Телеграмма килде.* ■ *[Мәстүрә:] Мәктәптән ҡайтыуыма улымдан хат килеп торған.* Ш. Янбаев. / Тәғәйенле ҡулға тейешле мәлендә бирелеү. *Пенсия килә.* / Керем рәүешендә ҡулға инеү. *Файҙа килә. Процент килә.*

**5.** Таралып, йәйелеп бирегә етеү (еҫ, тауыш, төтөн, һ. б.-ға ҡарата). *Еҫ килә. Йылы килә. Ишектән һыуыҡ килә.* ■ *Лапылдап әйләнгән һыу тирмәне ҡуласаһының тауышы килә.* И. Насыри. / Йүнәлеш менән ебәрелеү, бирелеү. *Торбанан газ килә. Эҫе һыу килә. Ток килә.* / Организмдан, эстән бүленеп тышҡа сығыу (ҡан, йәш һ. б.-ға ҡарата). *Ашаған кире килеү. Күҙҙән йәш килеү.* ■ *Мин Тимашевты күтәреп алдым. Уның ауыҙынан ҡан килә ине.* Д. Юлтый. /Тыуымға ятыу (ҡарындағы балаға ҡарата). *Дөрөҫ килеү. Бала аяғы менән килгән.* ■ *[Муйылбикә Гөлйөҙөмдө әйләп:] Балаһы арҡыры ғына килмәһә ярар ине. Ауыр эштән бик йыш була ул.* Һ. Дәүләтшина.

**6.** Бирегә табан ятыу, үтеү (юл, һуҡмаҡҡа ҡарата). *Ауылға ике юл килә. Һуҡмаҡ яр буйлап килә.*

**7.** Кеше тормошонда билдәле бер ваҡыт тыуыу, осор етеү. *Аҡ көн килде. Көткән көн килде.* ■ *Килде заман, инде шатлан ҡурай, йәмле тауышың илгә яңраһын.* Ш. Бабич. *Был ғүмерҙәр беҙгә ике килмәй, уйнап-көлөп ҡенә ҡалайыҡ* (Халыҡ йырынан). / Кеше алдына билдәле бер хәл тыуыу. *Бөтмәҫ мөхәббәт килде. Бәлә килде.* ■ *Ситтәр яуы ябырылғанда әймәгән башын халыҡ, өҫтөнә ҡайғы килгәндә ҡоймаған йәшен халыҡ.* Р. Ниғмәти.

**8.** Миҙгелдең билдәле бер ваҡыты башланыу, булыу. *Февраль килде. Ҡыш һуңлап килде.* ■ *Шаулап, гөрләп ярһыу яҙ килә.* Я. Вәлиев. *Яҙ иртә килһә, йәй яҡшы булмай, һыуыҡ була.* Һынамыш.

**9.** Ҡасандыр башланып дауам итеү, ғәмәлдә йөрөү. *Борондан килгән йола. Нәҫелдән килгән ауырыу. Былтырҙан килгән эш.* / Бер сығанаҡтан башланып дауам итеү (нәҫел-ырыуға ҡарата). *Беҙҙең ата-бабайҙар Урал батырҙың үҙ тамырынан килә (тиҙәр ҡыпсаҡтар).* Б. Бикбай. /Ниндәйҙер бер сәбәптән сығыу, булыу. *Наҙанлыҡтан килгән хата.* ■ *Әхмәт белә үҙенең бурлыҡ башы шул Миңьяндан ғына килгәнен.* Ғ. Сәләм. *Волжскийҙың һөйләшеүе лә, атлап йөрөүе лә бик ипле. Был, бәлки, уның эске йыйнаҡлығынан, үҙенең көсөнә ышаныуынан киләлер.* И. Абдуллин.

**10.** Талапҡа ярашлы, тейешенсә булыу, килешеү. *Төҫө-башы килгән. Килмәгән ере юҡ.* ■ *[Архитектор] бына әйтегеҙ, ти, был чертеждың ние килмәгән.* Ғ. Сәләм.

**11.** Билдәле бер ауырлыҡта булыу; тартыу. *Ике килограмм килгән арбуз. Һәр балыҡ ярты кило килә.* / Күпмелер үлсәү берәмегенә бәрәбәр булыу. *Биш һум аҡсаға ике метр ситса килә.*

**12.** *грам.* Ҡулланылыу, йөрөү (һүҙ йәки ялғауға ҡарата). *Исем алдынан килеү. Һан менән килеү. Һүҙҙәрҙең килеү тәртибе.* ■ *Башҡорт телендә күплек ялғауы дүрт төрлө килә.*

**13.** Төбәү килештәге исемгә эйәреп, билдәле бер фекергә тукталыуҙы аңлата. *Ҡарарға килеү. Бер уйға килеү. Һығымтаға килеү.* ■ *Килһә — килер, килмәһә — юҡ, тигән фекергә килдем дә [Зөләйхаһы] саҡырып хат яҙҙым.* Т. Йәнәби.

**14.** Төбәү килештәге исемгә эйәреп, билдәле бер тойғо, уй-фекерҙең аңда уяныуын, тыуыуын аңлата. *Иҫкә килеү. Күңелгә килеү.* ■ *Азат сумаҙанды .. суп-сар аҫтына йәшерҙе. Уны бынан эҙләргә берәүҙең дә башына килмәйәсәк.* Ә. Бикчәнтәев.

**15.** Эш-хәлде белдергән төбәү килештәге исем менән ниндәйҙер бер хәлгә күскәнде аңлата. *Бер рәүешкә килеү. Ипкә килеү. Хәрәкәткә килеү. Яйға килеү.* ■ *Күп йылдар буйы йыйылған .. көл бара-бара ҙур уба хәленә килә.* Ғ. Дәүләтшин.

**16.** 3-сө заттағы эйәлек ялғаулы исем менән торғанда, нимәгәлер мөмкинлек табылыуын, уңайы сығыуын аңлата. *Ибе килеү. Ыңғайы килеү. Йүне килеү.* ■ *Урыны килгәндә [ҡыҙҙы] биреп ҡуйған яҡшы инде.* Һ. Дәүләтшина.

**17.** Төбәү килештәге сифат менән торғанда эш-хәлдең башҡарылыу шартын аңлата. *Ауырға килеү. Еңелгә килеү. Ҡыйынға килеү. Тығыҙға килеү. Ҡыҫтауға килеү.* ■ *[Ғибаҙулла:] Бына шулай ике яҡтан әйткеләп-төрткөләп торһаҡ та саҡҡа килә.* Д. Исламов.

**18.** Сығанаҡ килештәге исем менән торғанда, эш-хәрәкәтте башҡарыу мөмкинлеген аңлата. *Хәлдән килеү.* ■ *Мин дә һине үҫтерермен килгән тиклем көсөм, ҡулымдан.* Р. Ғарипов.

**19.** Төп килештәге исемгә эйәреп, шул исемдән аңлашылған төшөнсәле һүҙбәйләнеш яһай. *Ауырлыҡ килеү. Зыян килеү. Асыу килеү. Ғәрлек килеү. Көнсөллөк килеү. Ялҡау килеү.*

**20.** *-ғы* формаһындағы ҡылымға ҡушылып теләкте белдерә. *Ашағы килеү. Белге килеү. Күрге килеү. Ҡайтҡы килеү.*

**21.** Исем, сифат, рәүеш һ. б. һүҙҙәр менән ҡушма ҡылым яһай. *Раҫ килеү. Пар килеү. Уңай килеү. Ыңғай килеү. Ғыж-ғыж килеү. Зыу килеү. Аңҡы-тиңке килеү. Аҫты-өҫкә килеү.*

**22.** Хәл ҡылымдың *-п* формаһына ҡушылып эш-хәрәкәттең бирегә йүнәлешен белдерә. *Алып китеү. Йөрөп килеү. Урап килеү.*

**23.** *-п* формаһындарғы хәл ҡылымға ҡушылып ярҙамлыҡ ҡылым сифатында ҡушма ҡылым яһай: а) эш-хәрәкәттең барышындағы дауамлылыҡты белдерә. *Ҡайтып килеү. Ҡыуып килеү;* б) эш-хәрәкәттең башланғыс мәлен белдерә. *Түшәктән тороп килә. Таң яҡтырып килгәндә;* в) хәл ҡылымдың *-а* формаһында шул уҡ формала торған төп ҡылымға ҡушылып, дауамлы эш-хәрәкәттең икенсе эш-хәрәкәткә булған мөнәсәбәтен белдерә. *Картая килә холоҡһоҙланыу. Үҫә килә матурланыу;* г) эш-хәрәкәткә ҡапыллыҡ мәғәнәһен бирә. *Ҡурҡып килеп уяныу. Ҡолап килеп төшөү. Һикереп килеп тороу. Йүгереп килеп инеү.*

**24.** *гәҙәттә* **килгәндә, килһәк, киләйек** формаһында ҡулланыла. Төбәү килештәге исем һәм исем урынында килгән һүҙгә эйәреп уға иғтибар йүнәлткәнде белдерә. *Төп мәсьәләгә килһәк...* ■ *Мин үҙемде һау тип иҫәпләйем. Ашауға килгәндә, тейгән өлөштө генә түгел, башҡаларға ла ярҙамлашам.* С. Агиш.

◆ **Килеп сығыу** хасил булыу, барлыҡҡа килеү. *Динислам ағайҙың мулла булып китеүе бөтөнләй юҡтан ғына килеп сыҡты.* Ф. Рәхимғолова. **Хуш килдегеҙ** ҡаршылағанда хөрмәт, ихласлыҡ белдергәндә әйтелә. **Яҡын да килмәү** 1) һис ризалашмау, күнмәү; 2) бөтөнләй тура килмәү. *Һинең яуабың яҡын да килмәй.*

**КИЛЕҺАП** *и. диал.* Төйгөс.

**КИЛЕШ** [1] *и.* Исемдәрҙең башҡа һөйләм киҫәктәренә бәйләнешен күрһәткән, үҙенә башҡа ялғауҙар менән билдәләнгән грамматик категория. *Төп килеш. Эйәлек килеш. Төшөм килеш. Төбәү килеш. Сығанаҡ килеш. Урын-ваҡыт килеш. Килеш менән үҙгәреү. Килеш ялғауы.*

**КИЛЕШ** [2] *и.* Тышҡы ҡиәфәт, килбәт. *[Гөлйөҙөм] бөтә килеше һәм торошо менән .. әбейҙе хәтерләтә.* К. Мәргән.

**КИЛЕШ** [3] *бәйл. диал.* Көйө. *Ултырған килеш. Һыу килеш.*

**КИЛЕШЕҮ** [1] *ҡ. урт. ҡар.* **килеү** 12, 20. *Тап килешеү. Сыр-сыу килешеү. Һүҙгә килешеү.*

**КИЛЕШЕҮ** [2] *ҡ.* **1.** Төҫ-башҡа, буй-һынға матур булып тура килеү. *Кейем килешеү. Төҫкә килешеү.* ■ *Сиратлашып йөҙөк һайлай ҡыҙҙар .. эй, килешә һуң, тип бынау ҡаш.* Ә. Таһирова. *Селтәрҙәрем минең сей мәрйен, килешмәгән ерен һүтәйек* (Халыҡ йырынан). / Йәтеш булып оҡшап тороу (ҡылыҡ, хәрәкәттәргә ҡарата). *Бейергә кәүҙәһе килешә. Эшкә ҡулы килешә. Һөйләргә теле килешә.*

**2.** Әҙәп, тәртип йәһәтенән урынлы булыу. *Зөләйхаға берәй төрлө ҡустәнәс алыу мәсьәләһе*

*иҫкә килеп төштө.. Әтү килешмәҫ, тип уйлаған булам инде.* Т. Йәнәби. *Ни ҡылаһа — шул килешә өйләнмәгән егеткә* (Халыҡ йырынан).

**3.** Яҡшы йоғонтоло, файҙалы булыу. *Дарыу килеште. Ял итеү килешкән.* ■ *[Гөлйөҙөм:] Кеше ҡоно беҙгә кәрәкмәй. Килешкән һеҙгә килешһен.* Һ. Дәүләтшина.

**КИЛЕШЕҮ** [3] *ҡ.* **1.** Һөйләшеп, аңлашып уртаҡ фекергә килеү. *Килешеп эшләү.* ■ *[Ҡоҙалар эште] ҡыҫҡараҡ тоторға килешкәндәр күрәһең, тәүге сана юлы төшкәс тә, ҡыҙ яғына түйлай киттеләр.* Ғ. Хөсәйенов. *Колхоз идаралары төҙөлөш эшен колхоз-ара ойошма менән килешеп, һөйләшеп эшләй.* «Совет Башҡортостаны» 1966, 20 ғинуар. / Һатыулашып, үҙ-ара ризалашыу. *Бүректе Таҙ мең һумға килешеп һатып ебәргән, ти* (Әкиәттән).

**2.** Риза булыу, күнеү. *Буранпалар китергә йыйынып бөтә. «Ярай, һеҙҙеңсә булһын»,— тип Юламан ҡарт килешеп ҡуя.* З. Биишева.

**3.** Ике араларғы дошманлыҡты бөтөрөү; ярашыу, татыулашыу. *Үҙ-ара килешеү. Килешеп йәшәү.* / Солох төҙөү. *Ҡәлгә ҡапҡаһынан ал флаг менән ике кеше сыҡты. Улар рус гәскәрҙәре менән килешеү хаҡында һөйләшергә килеүсе төркөк илселәре ине.* Ғ. Хөсәйенов.

**4.** Үҙ-ара аңлашып, яҡынлыҡ табыу. *Ағай менән килешеп киттек. Ул .. туҡталып, сиселеп һөйләшә башланы.* М. Ғафури.

♦ **Ҡыҙ килешеү** *ҡар.* **ҡыҙ.**

**КИЛЕШЕҮ** [4] *и.* Ил йәки ойошмаларҙың үҙ-ара һөйләшеп төҙөгән йөкләмә ҡағыҙы. *Сауҙа килешеүе. Килешеүгә ҡул ҡуйыу.*

**КИЛЕШЕҮСӘН** *с.* Төрлө яйға, һүҙгә, тәҡдимгә килешеп, ризалыҡ менән ҡараусан. *Килешеүсән кеше.*

**КИЛЕШ-КИЛБӘТ** *и. йыйн.* Тышҡы ҡиәфәт, төҫ-баш. *Терәпә яғынан яҡшы ерән ат еккән, килеш-килбәтенә ҡарағанда бик үк ҡарт булмаһа ла, кәрәктәй һаҡал үҫтергән бер сыуаш килеп етте.* Ф. Иҫәнғолов.

**КИЛЕШЛЕ** *с.* **1.** Килбәткә, ҡиәфәткә йәтешле, килешеп торған. *Килешле кулдәк. Килешле булыу. Килешле итеп тегеү.* / Йәтеш булып оҡшап торған (ҡылыҡ, хәрәкәттәргә ҡарата). *Килешле аҙым. Килешле кәүҙә. Килешле хәрәкәттәр.*

**2.** Урын-еренә лайыҡлы, тура килеп торған; урынлы, яраҡлы. *Килешле һүҙ.* ■ *Башҡорт өсөн башҡорт исеменән дә матур, унан да килешле исем юҡ.* «Башҡортостан ҡыҙы», 1968, № 2.

**КИЛЕШЛӘЙ** *р.* Килә атҡанда, килгән юл ыңғайында. *[Фермаға] килешләй, саҡ ҡына ураҡ яһап, Көсөк ауылына һуғылып үтергә булдыҡ.* Р. Шәкүров.

**КИЛЕШМӘҮСӘН** *с.* Нимә менәндер килешмәгән, риза булмаған. *БАССР граждандары .. йәмғиәткә ҡаршы эштәргә ҡарата килешмәүсән булырға, йәмғиәт тәртибен һаҡлауға бөтә саралар менән булышлыҡ итергә бурыслы.* Башҡорт АССР-ының Конституцияһы, 1984.

**КИЛЕШТЕРЕҮ** [1] *ҡ.* **1.** Килбәткә, ҡиәфәткә йәтеш, килешле итеү. *[Исхаҡ] ҡалын ҡара сәсен артҡа тараған да, йәшел һалдат фуражкаһын бик килештереп баҫып кейгән.* Һ. Дәүләтшина. /Матур, килешле итеү; еренә еткереү. *Килештереп бейеү. Килештереп һөйләү.* ■ *Азат бик тырышып, бик килештереп уҡый.* С. Кулибай.

**2.** Кем йәки нимәнеңдер ҡылығын оҡшатып, оҫта итеп ҡабатлау. *Һандуғас булып килештереп һайрау.*

**3.** Әҙәп, тәртипкә ярашлы, урынлы тип табыу; оҡшатыу. *[Зөһрә] иптәштәре янына .. буш ҡул менән генә сығыуҙы килештермәне.* М. Садыкова. / *мыҫҡ.* Берәй эш башҡарған булып ҡыланыу, оҡшатҡан булыу. *Йәнәһе ул эшкә ашыға, килештерә инде.*

♦ **Әйтеп килештергеһеҙ** һөйләп, һүрәтләп бирә алмаҫлыҡ; сиктән тыш. *Башҡортостан тәбиғәте әйтеп килештергеһеҙ матур, байлыҡтары һанап бөтөргөһөҙ күп.* «Совет Башҡортостаны», 1968, 21 март.

**КИЛЕШТЕРЕҮ** [2] *ҡ.* Үҙ-ара яраштырыу, татыулаштырыу. *Бөрйәндәр ҙә .. шаҡмандар менән ҡыпсаҡтарҙы үҙ-ара килештерергә яраҡкан. Әммә ике арала дау тынмаған.* Б. Бикбай.

**КИЛЕШҺЕҘ** *с.* **1.** Килбәткә, ҡиәфәткә тура килмәгән, килешмәгән. *Килешһеҙ күлдәк.*

**2.** Ярамаған, килешле булмаған; урынһыҙ. *[Хәлимов] танауын һемгереп алды. Хәлимовтың был ҡыланыштары мәжлес өсөн бөтөнләй ят һәм килешһеҙ ине.* Д. Юлтый.

**КИЛКЕ** *р.* Һан менән килеп эштең күпме ҡабатланғанын белдерә; тапҡыр, ҡабат. *Ике килке һыуға барҙым. Өс килке сумып сыҡтым.*

♦ **Бер килке** 1) ҡасандыр бер ваҡыт, бер заман. *Бер килке, Исхаков йөк машинаһы һатып алырға уйлай икән, тигән хәбәр сыҡты.* Р. Солтангәрәев; 2) күпмелер ваҡыт, бер аҙ ваҡыт. *Бер килке эшләгәс. Бер килке яҙғандан һуң;* 3) билдәле бер һандағы. *Бер килке халыҡ.* ■ *[Саттаров:] Хәҙер бында егерме-утыҙ кеше лә етә. Ҡыҙҙарҙың бер килкеһен ҡайтарҙым.* Я. Вәлиев.

**КИЛКЕ-КИЛКЕ** *р.* Ваҡыты-ваҡыты менән, ваҡыт-ваҡыт. *Ел килке-килке бал еҫе, яңы бешкән икмәк еҫе килтер[ә].* Ф. Иҫәнғолов. *Был гүмеркәйҙәрҙе уҙмай тиҙәр, килке-килке килеп уҙа икән* (Халыҡ йырынан).

**КИЛКЕМ** *и. ҡар.* **килке.**

**КИЛМЕШӘК** *и.* Ситтән килгән, сит ырыу кешеһе, сит яҡ кешеһе. *[Таңатар] табын ырыуына күсеп килә. Тәүҙә уны бында сит кеше, килмешәк тип атайҙар.* Ә. Вахитов.

**КИЛО́** [*рус.* ⟨ *фр.*] *и. һөйл.* Килограмм. *Бер кило ярма. Бер кfilолыҡ гер.*

**КИЛОВА́ТТ** [*рус.* ⟨ *фр.*] *и.* Электр тоғының ҡеүәтен үлсәү берәмеге (1000 ватҡа тигеҙ). *Өс турбиналы был гидроэлектр станцияһының ҡеүәте 12 мең киловатт буласаҡ.* «Совет Башҡортостаны», 1965, 19 сентябрь.

**КИЛОВАТТ-СӘҒӘТ** *и.* Бер киловатлыҡ электр тоғының бер сәғәтлек эшенә тигеҙ булған энергия үлсәү берәмеге. *Себер йылғаларынан йылына уртаса 1200 миллиард киловатт-сәғәт энергия алырға була.* М. Хисмәтов.

**КИЛОВО́ЛЬТ** [*рус.* ⟨ *фр.*] *и.* Электр тоғының көсөргәнешен үлсәү берәмеге (1000 вольтҡа тигеҙ).

**КИЛОГРАМЛАУ** *ҡ.* Килограмға һалыу. *Килограмлап бүлеү. Килограмлап үлсәү.*

**КИЛОГРАМЛЫ** *с.* Килограмға һалынған, килограмм менән үлсәүле. *Килограмлы гер.*

**КИЛОГРА́ММ** [*рус.*] *и.* Ауырлыҡ үлсәү берәмеге (1000 грамға тигеҙ). *Бер килограмм шәкәр.*

**КИЛОМЕТРЛАУ** *ҡ.* Километрға һалыу. *Километрлап үлсәү. Километрлап бүлеү.*

**КИЛТЕРЕЛЕҮ** *ҡ. төш. ҡар.* **килтереү**. *Ипкә килтереү. Хәрәкәткә килтереү. Килтерелгән нәмә.* ■ *БАССР граждандары дәүләт һәм йәмәғәт ойошмаларының .. үҙ хеҙмәт вазифаларын башҡарғанда законһыҙ эш итеүҙәре арҡаһында килтерелгән зыянды түләтергә хаҡлы.* Башҡорт АССР-ының Конституцияһы, 1984.

**КИЛТЕРЕҮ** *ҡ.* **1.** Ҡулға тотоп, күтәреп, йәки нимәгәлер һалып бирегә алып килеү. *Ат менән килтереү. Йөкмәп килтереү. Һөйрәп килтереү. Бесән килтереү. Утын килтереү. Килтереп ҡуйыу. Килтереп ташлау.* ■ *Ташты килтереүселәр ауҙарҙылар ҙа аттарын туғарып үҙ юлдарына киттеләр.* Т. Хәйбуллин. / Етәкләп, эйәртеп һ. б. юл менән бергә алып килеү. *Атты килтереү. Баланы мәктәпкә килтереү. Етәкләп килтереү. Ҡыуып килтереү. Тотоп килтереү.* ■ *Эт уны [егетте] бер тирәк төбөнә килтерә* (Әкиәттән). /Алға ҡуйыу (ашамлыҡты). *Аш килтереү. Сәй килтереү.* ■ *Һәр ун кешегә берәр көрәгә ҡымыҙ килтерәләр* (Әкиәттән). / Үҙ ағымы менән алып килеү (һауа, һыу, һ. б. ҡарата). *Болот ямғыр килтерҙе. Тулҡын кәмәне ярға килтереп һуҡты.* ■ *Талғын ел килке-килке бал еҫе, яңы бешкән икмәк еҫе килтер[ә].* Ф. Иҫәнғолов.

**2.** Нимәгәлер яҡын алып килеү, яҡынайтыу. *Ҡолаҡҡа килтереп тыңлау. Яҡтыға килтереп ҡарау.* ■ *Байғужа ауыҙын минең ҡолаҡҡа килтерҙе..* Д. Юлтый.

**3.** Алып килеп биреү, тапшырыу. *Бүләк килтереү. Ғариза килтереү. Хат килтереү.* / *күсм.* Һөйләп, әйтеп ишеттереү, еткереү. *Сәләм килтереү. Хәбәр килтереү. Яуап килтереү.* ■ *Башҡортостан еренә Ленин һүҙен килтергән Шәһит кеүек ир ҡайҙа?* Р. Ниғмәти.

**4.** Кемделер билдәле бер маҡсатта алып килеү, саҡырыу. *Ҡунаҡҡа килтереү. Эшкә килтереү.* ■ *[Бибинур] балаларға бик ипле кеше.. Килтерергә лә ҡуйырға кәрәк шуны [тәрбиәсе итеп].* Б. Бикбай.

**5.** *күбр. юкл.* Килергә, яҡынлашырға мөмкинлек биреү; ебәреү. *Ат уҫал, янына бер кемде лә килтермәй.* ■ *Беҙ «Хөсәиниә» мәҙрәсәһен күҙ уңында тотоп барһаҡ та, эш беҙ уйлағанса барып сыҡманы. Беҙҙе унда яҡын да килтермәнеләр.* Т. Йәнәби.

**6.** Килем, файҙа биреү. *Файҙа килтереү.* ■ *[Ҡәләмкол:] Мин үҙемә тейгән ерҙең бер аҙын арендаға һатам.. Биш алты йыл буйы ул аренда аҡсаһы килтерә тора.* Ғ. Дәүләтшин.

**7.** Фекерҙе иҫбатлау, нығытыу маҡсатында әйтеү; күрһәтеү. *Дәлилдәр килтереү. Миҫал килтереү. Факттар килтереп һөйләү. Теоретик мәғлүмәттәр килтереп аңлатыу.*

**8.** Донъяға тыуҙырыу. *Һарыҡ ике бәрәс килтерҙе.* ■ *[Гөлзифа:] Өләсәйем ун өс бала килтергән.* Б. Бикбай.

**9.** *күсм.* Һөҙөмтә рәүешендә нимәнелер булдырыу, тыуҙырыу. *Ҡыш һалҡын көндәр килтерҙе.* ■ *Әй, еремдең яҙы, килтер тағы, ләйсән үткәс, ҡояш сыуағын.* С. Кулибай.

**10.** Ниндәйҙер хәлгә дусар итеү, нимәгәлер сәбәпсе булыу. *Бәлә килтереү. Ҡаза килтереү. Зыян килтереү.*

**11.** Төбәү килештәге исем менән килеп, шул исемдән аңлашылған төшөнсәне ғәмәлдә булдырыуҙы аңлата. *Башҡа килтереү. Уйға килтереү. Хәтергә килтереү. Күҙ алдына килтереү. Бер фекергә килтереү. Тейешле һығымтаға килтереү. Бер рәүешкә килтереү. Ипкә килтереү.*

**12.** Төп йәки төшөм килешендәге исем менән ниндәйҙер уй-тойғоно, теләкте уятҡанды аңлата. *Асыу[ҙы] килтереү. Йоҡо[но] килтереү.*

**13.** Оҡшатыу һүҙе йәки ҡушма рәүеш менән төрлө тауыш, хәрәкәт, ниндәйҙер хәл-күренеште тыуҙырғанды аңлата. *Дөбөр-шатыр килтереү. Зил-зәбәр килтереү. Аҫтын-өҫкә килтереү. Сыр-сыу килтереү.*

**14.** Хәл ҡылымдың *-п* формаһында ҡушма ҡылымдың беренсе компоненты булып, ҡапыллыҡ мәғәнәһен бирә. *Килтереп һуғыу. Килтереп сығарыу.*

● *Ҡотло ҡунаҡ өйгә килһә, ҡуйың ике бәрәс килтерер.* Мәҡәл. *Яман аға ил көтһә, илгә дошман килтерер.* Мәҡәл. *Яңғыҙ ҡарға яҙ килтермәй.* Әйтем.

**КИЛТЕРЕШЕҮ** *ҡ. урт. ярҙамл. ҡар.* **килтереү** 1. *Күтәреп килтерешеү.*

**КИЛТЕРТЕҮ** *ҡ. йөкм. ҡар.* **килтереү** 1—13. *Утын килтертеү. Дәлил килтертеү. Хәрәкәткә килтертеү. Ҡарарға килтертеү. Аҫтын-өҫкә килтертеү. Саҡыртып килтертеү.*

**КИЛТӘ:** **килтә еп** Һуғып бөткәс, буйлыҡтың осонан ҡырҡып алынған еп.

**КИЛЬ** [*рус.* ⟨ *гол.*] *и.* **1.** Судноның төбөн аҫҡы яҡтан беркетеп тотҡан буй ағас.

**2.** Самолет йәки дирижабль ҡойроғоноң руль беркетелгән вертикаль өлөшө.

**КИЛЬВА́ТЕР** [*рус.* ⟨ *гол.*] *и.* Карап, кәмәнең артында ярылып ҡалған эҙ.

**КИ́ЛЬКА** [*рус.* ⟨ *эст.*] *и.* Сельдтар ғаиләһенә ҡараған ваҡ ҡына диңгеҙ балығы. *Килька консерваһы. Тоҙлаған килька.*

**КИЛӘ-КИЛЕП** *р.* Ҡапыл килтереп. *Килә-килеп һуғып ебәрҙе.*

**КИЛӘМҺЕҘ** *с. диал.* Аяуһыҙ. *Киләмһеҙ кеше.*

**КИЛӘҢКЕ** *и.* Бейәләрҙең бәүел тота алмаған ауырыуы. *Киләңке булыу.*

**КИЛӘП** *и. диал.* Кәләп.

**КИЛӘСӘК** *с.* **1.** Алда буласаҡ, киләһе. *Киләсәк йылдар. Киләсәк быуын.* ■ *[Юлия һәм Мурзин] үткәндәрҙе, хәҙерге һәм киләсәк көндәрҙе күҙ алдына килтереп һөйләштеләр.* Һ. Дәүләтшина.

**2.** *и. мәғ.* Алда буласаҡ көн, алдағы ваҡыт. *Уралҡайҙың аҫты алтын, өҫтө шиғыр, үҙе нур. Киләсәктә был ергә хоҙай үҙе ҡыҙығыр.* Ш. Бабич.

**3.** *и. мәғ.* Алда буласаҡ тормош, киләһе яҙмыш, ғүмер дауамы. *Балалар кешелектең киләсәге.* ■ *Беҙ йәшәйбеҙ иркен илдә, яҡты беҙҙең киләсәк.* Н. Иҙелбай.

♦ **Киләсәк заман** буласаҡ эш-хәрәкәтте белдергән ҡылым категорияһы.

**КИЛӘҺЕ** *с.* Алда буласаҡ. *Киләһе баҙар. Киләһе көн. Киләһе һайлау.*

**КИМГЕЛ-КИМГЕЛ** *р.* Ваҡыт-ваҡыт, өҙөк-өҙөк; килке-килке. *Ҡулым кимгел-кимгел һыҙлап ҡуя.*

**КИМГӘҮ** *к. ҡар.* **киңгәү.**

**КИМДЕ-КИМДЕ** *р. диал.* Кимгел-кимгел.

**КИМЕК** *и.* **1.** Елекле һөйәктең баш-башындағы майлы көпшәк өлөшө. *Кимек кимереү.*

**2.** *диал.* Күшкә. *Ҡайын кимеген ашау.*

**3.** *диал.* Кимерсәк.

**КИМЕКЛЕ** *с.* Кимеге бар. *Кимекле һөйәк.*

♦ **Кимекле урын** файҙа килер урын, төшөмлө урын.

**КИМЕР** *и. диал.* Тимрәү.

**КИМЕРЕЛЕҮ** *к. төш. ҡар.* **кимереү.**

**КИМЕРЕҮ** *к.* Ҡаты нәмәне теш менән ҡырыу. *Кимереп ашау. Шөкәрә кимереү. Шәкәр кимереү. Ҡуян кимергән тал.* ■ *Әпәш йоҡлай, аттар тора улаҡ төбөн кимереп төн буйы.* Д. Юлтый. *Бүре эттән һөйәкте тартып ала ла кимерә башлай* (Әкиәттән).

♦ **Елкәне кимереү** *ҡар.* **елкә.**

**КИМЕРЕҮСЕ** *и.* Алғы тештәре ныҡ үҫешкән һәм кимереү өсөн яраҡлашҡан үлән ашаусы, имеҙеүсе йәнлек (ҡуян, тейен, йомран, сысҡан һ. б.). *Кимереүселәр отряды.*

**КИМЕРЕШЕҮ** *к. урт. ҡар.* **кимереү.**

**КИМЕРСӘК** *и.* Умыртҡалы хайуандарҙа һәм кешелә һөлдәнең ҡайһы бер өлөшөн тәшкил иткән, быуындарҙы тоташтырыусы һығылмалы тығыҙ туҡыма. *Боғарлаҡ кимерсәге. Ҡабырға кимерсәге. Ҡолаҡ кимерсәге. Танау кимерсәге. Кимерсәк катлауы. Кимерсәк һөйәк. Йәш баланың һөйәге кимерсәк кенә була.*

**КИМЕРТЕҮ** *к. йөкм. ҡар.* **кимереү.** *Байҙар ҡарай балаһын һимертеп, алма менән кәнфит кимертеп* (Халыҡ йырынан).

**КИМЕҪ** *с. диал.* Кәрәкле, хәжәт. *Уның килеүе миңә кимеҫ түгел.*

**КИМ-КИМ** *р. диал.* Килке-килке.

**КИМОНО́** [*рус.* ⟨ *яп.*] *и.* **1.** Япондарҙың тоташ еңле милли кейеме.

**2.** Төбө уйылмай, тотош беселгән ең. *Кимоно итеп тегеү // Кимоно күлдәк.*

**КИМТЕК** *с. диал.* Китек.

**КИМТЕК-ҺҮТЕК** *и. йыйн.* Йыртылған-һүтелгән урын.

**КИМТЕЛЕҮ** *к.* **1.** Ситтән әҙ генә уйылыу. *Кимтелеп сығыу. Кимтелеп төшөү.*

**2.** *күсм.* Етешһеҙгә, кәмгә әйләнеү; кәмеү. *Эшләгәндән бер ер ҙә кимтелмәй.*

● *Яҡшы ҡатын тун текһә, сит-ситенән кимтелер; яман ҡатын тун текһә, йөй-йөйөнән һүтелер.* Мәҡәл.

**КИМТЕҮ** *к.* Нәмәнең бер ситенән әҙ генә уйыу. *Кимтеп алыу. Сабынлыҡты кимтеп сабыу.*

**КИМӘЛ** [*ғәр.*] *и.* **1.** Юғарылыҡ сиген белдергән шартлы һыҙыҡ. *Һыу бил кимәленә етте. Арба көпсәк кимәленә тиклем батты.* / Һыуҙың торошо, күтәрелеү билдәһе. *Йылғалағы һыуҙың кимәле артты.*

**2.** *күсм.* Үҫеү йәки үҫештәге үҙгәреш күләмен, ирешелгән юғарылыҡ дәүмәлен күрһәткән билдә. *Аң-белем кимәле. Культура кимәле. Үҫеш кимәле юғары булған. Уҡытыу эше юғары кимәлдә алып барыла. Конференция тейешле фәнни-теоретик кимәлдә үтте.* ■ *Октябрь революцияһы мине халыҡ артисы кимәленә күтәрҙе.* Ғ. Минһажев.

**3.** *диал.* Миҙгел. *Яҙ кимәлкәйҙәрен шунан беләм: зырҡыуыттар килә зыр ҡубып* (Халыҡ йырынан).

**КИМӘЛЙЕТЕҮ** *к.* Быуынға зыян килтереү, быуынды ҡуҙғатып ауырттырыу. *Ҡулды кимәлйетеү.*

**КИМӘЛЙЕҮ** *к.* **1.** Быуын ҡуҙғалыу, әҙ генә тайыу. *Ҡапыл яҙа баҫып, аяғым кимәлйене.*

**2.** *диал.* Биртенеү.

**КИНДЕР** *и.* **1.** Һабағынан сүс, орлоғонан май алына торған тарбаҡай ботаҡлы бейек үлән; тарма. *Киндер орлоғо. Киндер майы. Киндер баҫыуы. Киндер сәсеү. Киндер йолҡоу.* ■ *[Зөлхизә] киндер талҡып, картһына күлдәк-ыштанлыҡ һуғырға өйрәнде.* З. Биишева. **Баҫа киндер** нәҙек һабаҡлы ата киндер. **Тарма киндер** эре һабаҡлы инә киндер. **Киндер килеһе** киндер, етен төйә торған ағас киле.

**2.** Шул үҫемлектән алынған сүс. *Үҙәк киндер. // Киндер еп.* ■ *[Сейәбикә] орсоғон алып, төкөрә-төкөрә киндер иләргә тотонд*о. Т. Хәйбуллин. **Киндер тарамышы** киндерҙең еп-арҡан ишә торған эре сүсе. / Шул сүстән һуғылған туҡыма. *Баҫа киндере. || Киндер күлдәк. Киндер ашъяулыҡ. Киндер таҫтамал. Киндер тоҡ.*

**3.** Ҡулдан һуғылған һәр төрлө туҡыма. *Кесерткән киндере. Етен киндере. Киндер һуғыу.* **Киндер ағартыу** һуҡҡан киндерҙе һелтегә малып, ҡояшҡа йәйеп йәки ҡарға күмеп аҡ итеү. **Киндер туҡмау** һуҡҡан киндерҙе йомшартыу өсөн туҡмаҡ менән туҡмау. *Ҡыҙҙар ҡыш буйы иләп-һуғып әҙерләгән киндерҙәрен йыуып, яҙғы ҡарға йәйеп ағарталар ҙа, кискә табан бүрәнәгә һалып туҡмайҙар. Киндер шымара, матурлана.* К. Мәргән. **Киндер арбаһы** *диал.* көрөҫ сығыры (*ҡар.* **көрөҫ**). **Киндер станы (***йәки* **урыны)** киндер һуға торған стан.

**КИНДЕРАШ** *и. диал.* Киндер орлоғо.

**КИНДЕРӘ** *и. диал.* Сабата бауы.

**КИНЕМА́ТИКА** [*рус.* ⟨ *гр.*] *и.* Теоретик механиканың есемдәр хәрәкәтен геометрик күҙлектән өйрәнә торған бүлеге.

**КИНЕМАТО́ГРАФ** [*рус.* ⟨ *гр.*] *и. ҡар.* **кинематография.**

**КИНЕМАТОГРАФИ́СТ** [*рус.*] *и.* Кинематография өлкәһендә эшләгән белгес.

**КИНЕМАТОГРА́ФИЯ** [*рус.*] *и.* **1.** Тормош хәлдәрен хәрәкәтле һүрәт итеп, ысынға оҡшатып төшөрөү һәм экранда күрһәтеү сәнғәте; кино сәнғәте.

**2.** Культураның һәм халыҡ хужалығының фильмдар төшөрөү һәм халыҡҡа күрһәтеү менән шөғөлләнгән тармағы.

**КИНЕСКО́П** [*рус.* ⟨ *гр.*] *и.* Радио, телевидениела ҡулланылған электронлы ҡабул иткес трубка.

**КИНЕТИК** *с.* **1.** Кинетикаға мөнәсәбәтле. *Кинетик теория.*

**2.** Хәрәкәткә мөнәсәбәтле. *Кинетик энергия.*

**КИНЕ́ТИКА** [*рус.* ⟨ *гр.*] *и.* Теоретик механиканың динамика һәм статика мәсьәләләрен тикшерә торған бер бүлеге.

**КИНЙӘ** *с.* **1.** Ғаиләләге иң һуңғы. *Кинйә кыҙ. Кинйә ул.* ■ *Урал менән Ҡарағоштоң .. өс улы булды ти: өлкәне — Иҙел, уртансыһы — Яйыҡ, кинйә улдары — Һаҡмар. «Урал батыр».* / Йәш яғынан иң бәләкәй. *Кинйә апай.* ■ *Бер ағаһы ла ишек асып индермәгәс, Бибигәйшә кинйә ағаһының аҙбарына инеп йәшенгән* (Әкиәттән).

**2.** *диал.* Аҙаҡҡы, һуңғы. *Кинйә ай. Кинйә бал. Кинйә ҡымыҙ.*

**3.** (*баш хәреф менән*) Ир-ат исеме.

**КИНЙӘКӘЙ** *и. ирк.* Кинйә бала.

**КИНЙӘКӘҮ** *и. кар.* **кинйәкәй.**

**КИНО́** [*рус.*] *и.* **1.** *кар.* **кинематография.**

**2.** Экранда күрһәтеү өсөн махсус төшөрөп алынған әҫәр; фильм, кинофильм. *Тауышлы кино. Төҫлө кино. Кино ҡарау. Кино төшөрөү. Киң экранлы кино.* **Кино аппараты** фильм төшөрөү йәки уны экранда сағылдырыу өсөн ҡулланылған аппарат. **Кино артисы** фильмда уйнаған артист. **Кино будкаһы** *һөйл.* кино аппараты торған бүлмә.

♦ **Кино селтәре** илдәге йәки бер урындағы бөтә булған кинотеатрҙар. **Күсмә кино** урындан урынға күсеп йөрөгән кино күрһәткес. *Күсмә кино автомашинаһы.*

**КИ́НОВАРЬ** [*рус.* ⟨ *гр.*] *и.* **1.** Ҡыҙыл төҫтәге минерал, көкөртлө терегөмөш.

**2.** Шул минералдан алынған ҡыҙыл буяу.

**КИНОЖУРНА́Л** [*рус.*] *и.* Көндәлек тормош хәлдәрен сағылдырған ҡыҫҡа метражлы фильм.

**КИНОКА́МЕРА** [*рус.*] *и.* Кино төшөрә торған аппарат.

**КИНОКАРТИ́НА** [*рус.*] *и. кар.* **кино** 2.

**КИНОКОМЕ́ДИЯ** [*рус.*] *и.* Көлкөлө йәки сатирик йөкмәткеле фильм.

**КИНОЛАШТЫРЫУ** *к. кар.* **кинофикациялау.**

**КИНОЛЕ́НТА** *и. кар.* **кинотаҫма.**

**КИНОМЕХА́НИК** [*рус.*] *и.* Кинофильмдар күрһәтеү эшен башҡарыусы эшсе.

**КИНООПЕРА́ТОР** [*рус.*] *и.* Фильмды төшөрөүсе белгес.

**КИНОПЕРЕДВИ́ЖКА** *и. шул уҡ* **күсмә кино** (*кар.* **кино**).

**КИНОПРОКА́Т** [*рус.*] *и.* Экранда күрһәтеү өсөн фильмдарҙы ишәйтеү һәм уларҙы ваҡытлыса файҙаланыу өсөн кинотеатр, клубҡа һ. б. биреү эше.

**КИНОРЕЖИССЁР** [*рус.*] *и.* Фильмды ҡуйыусы, картинаның режиссеры.

**КИНОСТУ́ДИЯ** [*рус.*] *и.* Кинофильмдар эшләп сығара торған йәки киносценарий ижад итеүҙән башлап, фильм баҫылып сыҡҡанға тиклемге бөтә эш башҡарыла торған предприятие.

**КИНОСЦЕНА́РИЙ** [*рус.*] *и.* Кинофильм эшләүгә нигеҙ итеп алынған әҙәби әҫәр.

**КИНОСЫ** *и. һөйл.* Кино күрһәтеүсе, киномеханик.

**КИНОТАҪМА** *и.* Фильмдың айырым бер данаһы; кинолента.

**КИНОТЕА́ТР** [*рус.*] *и.* Кинофильм күрһәтә торған махсус бина.

**КИНОУСТАНО́ВКА** [*рус.*] *и.* Кино күрһәтеү йыһаздары.

**КИНОФЕСТИВА́ЛЬ** [*рус.*] *и.* Айырым темаға бәйле фильмдарҙы йәки ниндәй ҙә булһа бер илдәге иң яҡшы фильмдарҙы күрһәтеү эше.

**КИНОФИКА́ЦИЯ** [*рус.*] *и.* Халыҡты кино селтәре менән тәьмин итеү эше.

**КИНОФИКАЦИЯЛАУ** *к.* Кинотеатр йәки кино күрһәтә торған урын менән тәьмин итеү. *Ауылдарҙы кинофикациялау.*

**КИНОФИ́ЛЬМ** [*рус.*] *и. кар.* **кино** 2. *Ғилми-популяр кинофильм. Телевизион кинофильм.*

**КИНӘ** *терк. иҫк. кит.* Ки йәнә, йәнә. *[Дилә] Гөлйөҙөмдөң әйтеп тороуы буйынса, ауылдың яртыһынан тигәндәй, оҙон сәләмдәр ҡуйып бөтөп, «вә кинә үҙемдең хәл-әхүәл улына ҡалса...», тип аръяғына теҙеп алып китте.* Һ. Дәүләтшина.

**КИНӘЙӘ** [*ғәр.*] *и.* Туранан-тура аңлашылып тормаған йәшерен мәғәнә. *Миңә ауыр аңлашыла ине уҡытыусыларҙың һүҙҙәре. Кинәйә күберәк ине ул һүҙҙәрҙә.* Я. Вәлиев. / Уратып, ситләтеп әйтелгән һүҙ. *Кинәйә яһау. Кинәйә менән һөйләү.* ■ *[Ғилман:] Ҡыҙыҡ карт бит ул Хәлкәс. Һиңә туранан-тура бер һүҙ ҙә әйтмәҫ, кинәйә менән икенсе яҡтан уратып килтереп еткерер.* С. Агиш.

**КИНӘЙӘЛЕ** *с.* Туранан-тура аңлашылып тормаған йәшерен мәғәнәле. *Кинәйәле һүҙ. Кинәйәле ҡараш.* ■ *[Һабрауға] шиғриәт тасуирҙарының бар нескәлектәрен, кинәйәле боролмаларын аңлау ҡыйын ине.* Ә. Хәкимов.

**КИНӘЙӘЛӘҮ** *к.* Уратып, ситләтеп әйтеү. *Туҡай Ғафуригә кинәйәләп: «Хәҙер Агиҙелдә боҙ китһә лә, тормош ҡалын боҙ аҫтында ята бит әле»,— ти.* Ғ. Хөсәйенов.

**КИНӘЙӘҺЕҘ** *с.* Йәшерен булмаған, туп-тура мәғәнәле. *Кинәйәһеҙ һүҙ. Кинәйәһеҙ генә һөйләү.*

**КИНӘМ** *и. диал. кар.* **кенә** [1].

**КИНӘНДЕРЕҮ** *к.* **1.** Нимәгәләр булған ихтыяжды ҡәнәғәтләндереп, ҡыуандырыу; рәхәтләндереү. *Быйылғы йылдың яҙы ла, йәйе лә ҡояшҡа кинәндермәне.* Ш. Янбаев. *Хәҙер инде Айрас әсәһе менән туғаны Ғәйшәне лә ит-һурпаға кинәндерҙе.* Ш. Насыров.

**2.** Файҙа килтереп, изгелек күрһәтеп ҡыуандырыу. *Әхмүш өйөндә лә бер эш ҡуҙғатманы.. Ячейка эшендә лә кинәндермәне.* Д. Юлтый.

**КИНӘНЕС** *и.* Берәй нәмәнән ҡәнәғәт булғанда, рәхәтлек тапҡанда килгән ҡыуаныс. *Кинәнескә сик тә, үлсәү ҙә юҡ: тәпәй баҫты ҡыҙым — күҙ алмам.* Ш. Бикҡол.

**КИНӘНЕСЛЕ** *с.* Шатлыҡ уятҡан; ҡыуаныслы. *Кинәнесле хәбәр.*

**КИНӘНЕҮ** *к.* **1.** Иркенлек, бәйһеҙлек тойоу. *Бүребайҙан ҡотолғас инде, ул [Өлкәман] Айрасты кинәнеп яра башланы.* Ш. Насыров. / Иркенлек, рәхәтлек тойоу. *Ирекле ҡоштарҙың йәйге таңда кинәнеп йырлашыуҙары Гөлйөҙөмдөң йөрәген өҙҙө.* Һ. Дәүләтшина.

**2.** Ҡәнәғәт булып ҡыуаныу. *Аҡъял .. ҡош, йәнлек һунарына йөрөгән. Ағаһы менән әсәһе быға һөйөнөп, кинәнеп бөтә алмаған* (Әкиәттән).

**3.** Сығанаҡ килештәге һүҙҙән һуң килеп, рәх-

мәт йөҙөнән әйтелгән теләкте белдерә. *Ҡулыңдан кинән. Күҙеңдән кинән.*

● *Ит тапмаған үпкәгә кинәнгән.* Мәҡәл.

**КИНӘНЕШЕҮ** *к. урт. кар.* **кинәнеү.**

**КИНӘТ** *р. кар.* **ҡапыл.** *Кинәт һиҫкәнеп китеү.*

**КИҢ** *с.* **1.** Иңе, арҡырыһы ҙур; *киреһе* тар. *Киң йылға. Киң маңлай. Киң таҡта. Киң таҫма. Киң япраҡлы үлән. Киң яурын.* ■ *[Грановитая палатаһы] киң бейек тәҙрәләре, мәрмәр колонналары, ғәләмәт люстралары .. менән иҫ китмәле ине ул көн.* Ғ. Хөсәйенов.

**2.** Ҡыҫынҡы түгел, иркен (кейемгә ҡарата). *Киң балаҡлы салбар. Киң итәк. Киң күлдәк.*

**3.** Ҙур аралы, киренке. *Киң аҙым. Киң ҡолас. // Киң баҫып атлау.*

**4.** Күп урынды биләгән, йәйрәп ятҡан; иркен. *Киң дала. Киң туғай. Киң майҙан.* ■ *Көн салт аяҙ. Ҡаш өҫтөнә ҡулыңды ҡуй ҙа, ҡара: алыҫ-алыҫтарға һуҙылып киткән киң яландар ус төбөндә кеүек ҡенә булырҙар.* Б. Бикбай. *Киң ишек алды ҡарағайҙан һалынған келәттәр, таштан һалынған һарайҙар, .. атлыҡсалар менән уратылған.* Ғ. Дәүләтшин. *Ер киң, тиҙәр, миңә урын юҡ. Сөнки күңелемә тынғы юҡ.* М. Кәримов.

**5.** *күсм.* Бер ни менән сикләнмәгән. *Киң тормош.* / Тарлыҡ хисен белмәгән; йомарт. *Киң бәйел. Уның күңеле киң.* **Киң күңелле** тарыға белмәгән; мәрхәмәтле, ярҙамсыл. *[Дауытов] тормошта киң күңелле алсаҡ бер кеше. Ул .. ярҙам итергә тырышып тороуы менән халыҡҡа оҡшай.* Б. Бикбай. / Күп яҡлы, тәрән. *Киң ҡараш.*

**6.** *күсм.* Күпте эсенә алған, күп нәмәгә таралған. *Халыҡтың киң ҡатламы. Агитацияны киң күләмдә алып барыу. // Киң йәйелдереү. Киң танылыу.* ■ *Икенсел һәм әйәрсен продукттарҙы хужалыҡ әйләнешенә киң индерергә кәрәк.* «Совет Башҡортостаны», 1985, 11 ноябрь.

● *Йәйҙең өйө киң.* Мәҡәл. *Күкрәк киреп эшләһәң, килер ерең киң булыр.* Мәҡәл. *Күңелең киң булһа, бәхетең кәм булмаҫ.* Мәҡәл. *Ҡыш ҡорһағы — киң алап.* Мәҡәл. *Ярлының ятыры киң.* Мәҡәл.

**КИНГӘТЕҮ** *к.* Ныҡ йонсотоп, хәлһеҙләндереү. *Ул [Ғатаулла] балаһын аслыҡ киҫкән ауыр йылдар аша киңгәтмәй алып ҡайтып еткергәненә ҡыуанды.* Й. Солтанов.

**КИҢГӘҮ** *к.* Ныҡ йонсоп, хәлһеҙләнеү, киҫеләү. *Аслыҡтан киңгәү. Ауырыуҙан киңгәү. Ауыр эштән киңгәү.* ■ *Әсәйем шул ҡайғынан, аслыҡтан киңгәп түшәккә йығылған.* «Хикәйәләр», 1974.

**КИҢЕРҘӘК** *и. диал.* Боғарлаҡ.

**КИҢЕРҺЕҮ** *с.* **1.** Иҫкергән, ҡаҡһыған (еҫкә, тәмгә ҡарата). *Ҡымыҙҙың киңерһеү тәме бар.*

**2.** Сөскөл, татһыҙ. *Айыу тоҙ яламаған, ите киңерһеү була.*

**КИҢКӘЙ** *с. диал. кар.* **кәкре** [1]. *Киңкәй таяҡ.*

**КИҢКӘЙЕҮ** *к. диал.* Кәкрәйеү. *Сананың тәртәһе киңкәйгән.*

**КИҢЛЕК** *и.* **1.** Киң булған хәл, киң булыу сифаты. *Донъя киңлегендә ни файҙа, аяҡ кейемдәрең тар булғас.* Д. Юлтый. *Зәңгәр офоҡ.. Уға яҡынайһаң, киңлектәре уның асыла.* Ш. Бикҡол.

**2.** Берәй нәмәнең иңе, арҡыры үлсәме. *Йылғаның киңлеге. Бүлмәнең киңлеге.*

**3.** Йәйрәп ятҡан иркен ер. *Баҫыу киңлеге. Дала киңлеге.* ■ *Зөлхизә ҡайһы саҡтарҙа, саф һауала бер аҙ күңелен асҡыһы килеп, ҡырға — тәбиғәт киңлегенә сығыр булған.* Н. Иҙелбай.

**4.** Иге-сиге булмаған арауыҡ. *Һауа киңлеге. Йыһан киңлегенә сығыу.*

**5.** Экваторҙан меридиан буйынса градустар менән үлсәнә торған ара. *Төньяҡ киңлек. Көньяҡ киңлек.*

**6.** *күсм.* Күп яҡлы булыуҙан, күпте эсенә алыуҙан килгән тулылыҡ, киң күләмлек. *Ҡараш киңлеге.*

**КИҢШЕРЕК** *и.* Танау тишеге. *Ат шунда уҡ үләнгә ташланды һәм танау киңшектәренә ингән үлән һабаҡтарынан .. бышҡыра-бышҡыра йомолоп ашарға тотонды.* К. Мәргән.

**КИҢӘЙЕҮ** *к.* **1.** Киңлеккә артыу, киңгә әйләнеү, киң булыу. *Йылға үҙәне киңәйгән. Юл киңәйҙе.* ■ *[Императрицаның] күлдәгенең түше ярым асыҡ, биле нескә, итәктәре киңәйеп, ҡабарып киткән.* Ғ. Хөсәйенов.

**2.** Күләм яғынан ҙурайыу; иркенәйеү. *Итек киңәйгән. Күлдәктең еңе һуҙылып киңәйҙе.*

**3.** *күсм.* Эстәлек менән байыу, артыу. *Белем киңәйә. Ҡараш киңәйҙе.*

**4.** Һан, күләм яғынан үҫеү, күс-ҡеүәте артыу. *Һуңғы йылдарҙа республикабыҙҙың төҙөлөш майҙаны тағы ла киңәйҙе.* «Совет Башҡортостаны», 1985, 13 ноябрь. *Йылдар үтеү менән беҙ үҫербеҙ, беҙҙең сафтар тағы киңәйер.* С. Агиш.

**5.** Киң таралыш алыу, көсәйеү. *Уҙешмәкәр түңәрәктәр эше киңәйҙе.*

◆ **Тын (йәки күкрәк) киңәйеү** 1) тын алыуы иркен булып китеү, тын алыуы еңеләйеү; 2) йөрәкте өйкәп торған уй-хистән ҡотолоу.

**КИҢӘЙТЕЛЕҮ** *к. төш. кар.* **киңәйеү.** *Ҡарабойҙай сәсеүлектәре киңәйтелде.*

**КИҢӘЙТЕҮ** *к.* **1.** Киңлеккә арттырыу, киң итеү. *Каналды киңәйтеү. Юлды киңәйтеү. Күлдәкте киңәйтеү. Ҡураны киңәйтеп һалыу.* ■ *Әхмиҙең ҡулындағы сүкеш доңҡ-доңҡ итеп төшә лә ҡаты тимерҙе иҙә, киңәйтә.* Ш. Шәһәр.

**2.** Күләм яғынан ҙурайтыу; иркенәйтеү. *Күлдәкте киңәйтеү. Ҡураны киңәйтеп һалыу.*

**3.** *күсм.* Эстәлек яғынан байытыу, арттырыу. *Уҡылған китаптарҙы уҡыусыларҙан һөйләтеү ҙә телмәрҙе үҫтереү һәм балаларҙың аңын киңәйтеү өсөн билдәле әһәмиәткә эйә.* «Башҡортостан уҡытыусыһы», 1965, № 1.

**4.** Һан, күләм яғынан арттырыу, көсәйтеү. *Хужалыҡты киңәйтеү.*

**5.** Киң ҡатламға таралыу мөмкинлеген булдырыу, тәьҫир көсөн арттырыу.

**КИҢӘЙТТЕРЕҮ** *к. йөкм. кар.* **киңәйтеү.**

**КИО́СК** [*рус.* ⟨ *фр.*] *и.* Ваҡ-төйәк нәмә һата торған бәләкәй павильон. *Китап киоскыһы.*

**КИОСКЁР** [*рус.*] *и.* Киоскылағы һатыусы.

**КИП** *и. иҫк.* Ҡалып, форма.

● *Кирбес кибенән үсмәс.* Әйтем.

**КИПАРИС** [*рус.* ‹ *гр.*] *и.* **1.** Көньякта үсә торған һәр ваҡыт йәшел ылыҫлы бейек ағас. *Кипаристар аллеяһы.* ■ *Гүзәллектә кипарис — тиңһеҙ ағас, ләкин ни файҙа емеше булмағас?* М. Харис.

**2. Кипарис һымаҡтар, кипаристар** *бот.* Ылыҫлылар класына ҡараған үҫемлектәр ғаиләһе (кипарис, артыш, сауыр һ. б. инә).

**КИПЛӘНЕҮ** *ҡ. төш. кар.* **кипләү.** *Кипләнгән тауар.*

**КИПЛӘТЕҮ** *ҡ. йөкм. ҡар.* **кипләү.** *Мамыҡты кипләтеү.*

**КИПЛӘҮ** *ҡ.* Таҫлап һалыу, төргәкләү. *Ҡатын-ҡыҙ, ҡарт-ҡоро, егет-елән мыж килә. Йөн йыуа, киптерә, кипкәндәрен ташый, кипләп өйә.* А. Таһиров.

**КИПСӘЛДЕРЕҮ** *ҡ. йөкм. ҡар.* **кипсәлеү** 2. *Кипсәлдереп теккән ҡулдәк.*

**КИПСӘЛЕҮ** *ҡ.* **1.** Тығыҙ урынға тығылып ҡыҫылыу; кәпләнеү.

**2.** Тәнгә һылашып ҡыҫыу (кейемгә ҡарата). *Ҡулдәгемдең .. гап-таман ғына еңе, итәге лә оҙон түгел, кипсәлеп тора биле.* А. Игебаев.

**КИПСӘҮ**[1] *ҡ.* Ҡыҫып торорлоҡ тығыҙ, тар итеү (кейемде). *Кипсәп тегеү.* ■ *Түрәләрҙе .. күк сога кәзәки кейгән, кәзәкиенең еҙ төймәләрен һимеҙ кәүҙәһенә кипсәп элгән .. бер кеше ҡаршы алды.* Ғ. Дәүләтшин.

**КИПСӘҮ**[2] *с.* Тар, тығыҙ (кейемгә ҡарата). *Кипсәү күлдәк.*

**КИПТЕРГЕС**[1] *и.* Дымлы нәмәләрҙе киптереү өсөн эшләнгән ҡоролма. *Етен киптергес. Иген киптергес.*

**КИПТЕРГЕС**[2] *и.* Ҡара һурҙыра торған ҡағыҙ. *Ике йөҙ дана дәфтәр һәммәһенең дә эсендә киптергес бар.* М. Тажи.

**КИПТЕРЕЛЕҮ** *ҡ. төш. ҡар.* **киптереү** 1, 2. *Һуғарыулы һәм киптерелгән ерҙәрҙе файҙаланыуҙы яҡшыртыуға айырыуса иғтибар бирелә.* «Совет Башҡортостаны», 1985, 27 ноябрь.

**КИПТЕРЕНЕҮ** *ҡ.* Өҫ-башты киптереү. *Ут яғып киптеренеп алыу.*

**КИПТЕРЕҮ** *ҡ.* **1.** Дымлы, һыулы нәмәләрҙең дымын бөтөрөү; ҡоро итеү. *Кер киптереү. Елдә киптереү. Ҡояшта киптереү.* / Кәрәкле дымын бөтөрөү, артыҡ нығ ҡоро итеү. *Ел иренде киптерә.* / Ситкә ағыҙып һыуын бөтөрөү. *Йылғаны киптереү. Һаҙлыҡты киптереү.* ■ *Беҙҙә һуғарыу талап иткән ерҙәр менән бер рәттән киптерергә мохтаж булған артыҡ дымлы һәм һаҙлыҡлы ерҙәр ҙә бар.* «Совет Башҡортостаны», 1966, 23 июнь.

**2.** Һутын бөтөрөү, ҡоро итеү (һаҡлау ниәте менән). *Бесән киптереү. Еләк киптереү.* ■ *Көҙ көнө йыйылышта халыҡҡа фронт хәлдәрен һөйләп, һәр кем мөмкин тиклем ярҙам итһен тигәс, ике йөктән артыҡ шөкәрә киптереп бирҙеләр.* Һ. Дәүләтшина.

**3.** Бик нығ һыуһатыу. *Сәй эсермәй киптереү.*

**4.** *кусм.* Ныҡ ябыҡтырыу. *Уй-хәсрәт киптерҙе. Ауырыу киптерҙе.*

**КИПТЕРТЕҮ** *ҡ. йөкм. ҡар.* **киптереү.**

**КИПШЕНЕҮ** *ҡ.* **1.** Бер аҙ кибенеү, киптеренеү. *Кипшенеп алыу.* ■ *Өй артындағы сағандың ысыҡҡа күшеккән япраҡтары тиҙерәк кипшенергә ҡояшты көтә.* Ш. Янбаев.

**2.** *ҡар.* **кипшеү**[1].

**КИПШЕҮ**[1] *ҡ.* Бер аҙ кибеү; һурығыу. *Игендәр кипшене, баҫыуҙа ғәҙәттәге ҡайнар эш башланды.* Ә. Вәли.

**КИПШЕҮ**[2] *с.* Әҙ генә кипкән, һурыҡҡан. *Кипшеү ер.*

**КИР** *с.* **1.** Һарғылт туры (ат төҫөнә ҡарата). *Кир бейә. Кир дунан.*

**2.** *и. мәғ.* Шул төҫтәге ат. *Ҡараңғы ла төндә юл яҡтыртҡан Салауат менгән кирҙең ҡашҡаһы* (Халыҡ йырынан). **Кир туры** ҡорһаҡ аҫты, морон тирәһе һарғылтыраҡ туры ат.

**КИРАМ** [*ғәр.*] *с.* **1.** *иҫк.* Киң күңелле, яҡшы уйлы, ирәбе. *Үҙеңдең фазыл вә кирамын берлә ҡабул ҡыл.* М. Өмөтбаев.

**2.** (*баш хәреф менән*) Ир-ат исеме.

**КИРАМӘТ** [*ғәр.*] *и. ҡар.* **кәрәмәт.** *Башҡорттарым уҡыу кәрәк, уҡыу кәрәк.. Уҡығандар күктә осор, һыуҙа йөҙөр, юҡтыр унда әүлиәлек, кирамәттәр.* Аҡмулла.

**КИРБЕС** [*рус.* кирпич] *и.* **1.** Балсыҡ менән ҡомдан иҙеп ҡалыпҡа һуғып эшләнгән төҙөлөш ташы. *Ҡыҙыл кирбес. Силикат кирбес. Сей кирбес. Кирбес өй. Кирбес ҡойма. Кирбес заводы. Кирбес һуғыу. Ҡыҙыл кирбестән һалынған йорт.*

**2.** Дүрткелләп ҡалыпҡа һалып һуҡҡан нәмә. *Тиҙәк кирбесе. // Кирбес икмәк.* ■ *Машинаның эсенә бесән ырғыталар ҙа, ул бесәндәр кирбес булып тупылдап сығып торалар.* Һ. Дәүләтшина.

**КИРБЕСЛӘҮ** *ҡ.* Кирбес рәүешенә килтереү; кирбес итеү. *Торфты кирбесләп киҫеү.*

**КИРБӘҘ** *с. диал.* Ҡылансыҡ.

**КИРГЕ** *и.* **1.** Төрлө нәмәне киреү өсөн ҡулланылған ҡулайлама. *Сигеү киргеһе. Шәл киргеһе.* ■ *Атайым уларҙы [ҡуяндарҙы] тунап, тиреләрен әйләндереп, киргегә киреп, алғы өйгә ҡуйҙы.* Б. Бикбай.

**2.** Ҡул бысҡыһының керешен бора торған таяҡ.

◆ **Кирге энәһе** ҡайыу эшендә ҡулланылған ырғаҡлы энә; сигеү энәһе.

**КИРҒЕС** *и. һөйл.* Кирге.

**КИРҘЕРЕҮ** *ҡ. йөкм. ҡар.* **киреү** 1, 2. *[Яҡуп — Фәхригә:] Бар, юҡты бушҡа бушатҡанса, хәҙер үк быҙауҙарҙы тунатып, тиреләрен кирҙереп ҡуй.* Б. Бикбай.

**КИРЕ**[1] *с.* **1.** Тейешле йәки төп тарафҡа ҡаршы. *Кире йүнәлеш.* ■ *[Ҡотлояр:] Ныязгол да улай иреп китҡәс, .. иртән ҡояш кире яҡтан сыҡмаһа ярар ине.* Һ. Дәүләтшина.

**2.** Көткәнгә ҡапма-ҡаршы булған, ҡапма-ҡаршы эстәлекле. *Кире яуап. Кире мәғәнә. // Киреһен һөйләү. Киреһен эшләү. // Кире һөйләү.* ■ *Бибинур — тап Ғамирҙың киреһе: йор һүҙле, оҫҡон сәсеп торған ҡыҙ.* Б. Бикбай. *[Михаил — Айбулатҡа:] Бына кәрәк булһа, башҡорт кешеһе лә ҡунаҡҡа барыуға кире торор икән! Әйҙә, әйҙә киттек.* Һ. Дәүләтшина.

**3.** Хуп күрелмәгән, ыңғай булмаған; насар, тиҫкәре сифатлы. *Кире образ. Тәрбиә эшендәге кире күренештәр. Холоҡ, ҡылыҡтағы кире яҡтар. //* **Кире[гә] китеү** насарланыу, уңмай башлау. *[Хәбирйән:] Емерек хужалыҡ, ауырыу әсә. Етмәһә, аслыҡ йылға килеп юлыҡтым. Эш бер*

*кирегә китһә, китә бит ул, яңғыҙ аттан да яҙылды.* Б. Бикбай.

**4.** Кеше яйына килмәгән; тиҫкәре. *Беҙҙең ауыл халкы әллә ни иткән кире халык: үҙ файҙаһын үҙе аңларға теләмәй.* Ә. Чаныш. **Кирегә бөткән** бик тиҫкәре ғәҙәтле. *Минең шундай карышыуҙарға үртәнеп тә куялар. Бик кирегә бөткән, тиҫкәре малай итеп күрәләр.* С. Агиш.

**5.** *физ.* Электрондарҙан торған, электр төрөнә бәйле; *кireһе* ыңғай. *Кире заряд.*

**6.** *р. мәғ.* Тәүге урынға йәки тәүге хәлгә. *Кире алыу. Кире биреү. Кире инеү. Кире сигеү. Кире сығыу. Кире һалыу. Кире һатыу. Кире ятыу.* ■ *Хандың хәҙер тыуған иленә кире кайтырға һис самаһы юк, ти. «Миңә тыуған ерҙән арыу торған ер якшырак»,— ти икән.* Ғ. Хөсәйенов. *Актар ылауға алған аттарҙы кире кайтармай үҙҙәре менән алып китә.* Ғ. Ибраһим-Кыпсак. *[Эт] сабауыллап юл сатына кире килә ине.* С. Кулибай. / Кабаттан, яңынан. *Кире тегеү. Кире тағатыу.*

♦ **Кирегә һаплау** әйтелгән һүҙҙән икенсе төрлө, тиҫкәре мәғәнә сығарыу. **Кире кағыу** 1) каршы тороп, һөжүмде кайтарыу. *Һуғыш ике сәғәткә һуҙылды. Дошмандың танк атакаһы кире кағылды.* Ә. Харисов; 2) үҙ өҫтөңә алмай, дөрөҫ түгел тип барыу. *Дәлилде кире кағыу. Ғәйепте кире кағыу;* 3) кабул итеүҙән баш тартыу. *Бүләкте кире кағыу. Һүҙҙе кире кағыу. Үтенесте кире кақмау.* **Кире кайтыу** тәүге уй-ниәттән баш тартыу. *Янһаров .. алдына алған уйынан кире кайтманы.* Б. Бикбай. **Кире түңкәреү** ниәтләгән эштән баш тартыу. *[Байрамбикә әбей:] Улыңды сакырып алып әйт, әгәр ул юлыңдан баш тартмаһаң, беҙҙән хәйер-фатиха юк, тиң. Ул эшен кире түңкәрһен.* К. Мәргән. **Кире уйлау** дүнеү, тәүге уйҙан кайтыу. **Кире һуғыу** кабул итмәй кире кағыу. **Кире һүреү** дүндереү. *Миләүшә егетте кире һүргән: «Куй, егет, юк эш менән йөрөмә»,— тигән* (Әкиәттән). **Кире һүтеү** эште тәүге хәленә кайтарыу. *[Үмәр карт:] Мулла һиңә укыған никахты кире һүтә аламы ни?* Һ. Дәүләтшина.

● *Бер теленгән икмәк кире йәбешмәй.* Мәкәл. *Кире кешенең акылы кермәле лә сыкмалы.* Мәкәл.

**КИРЕ**[2] *бәйл.* Сығанак килештәге исем йәки алмаштарҙаң һуң килеп, билдәле бер мәлдән, эштән һуңғы вакытты белдерә. *Төштән кире. Бынан кире.*

**КИРЕГӘ** *р.* Кире якка, кирегә табан. *Кирегә боролоу. Кирегә укыу.*

**КИРЕЛДЕРЕҮ** *к.* **1.** Кул менән һыпырып, яҙылдырыу, һуҙылдырыу (сабый баланы).

**2.** *эйһ. ф. кар.* **кирелеү** 2. *Ауырыйым ахыры кирелдерә, һуҙылдыра.*

**КИРЕЛЕК** *и.* **1.** Үҙ һүҙлелек, тиҫкәрелек. *[Ғәзимә:] Айбулаттың ғүмеренә шул сей киреләге калмаҫ инде.. Әҙәм ыңғайына киләме ул.* Һ. Дәүләтшина.

**2.** Көтмәгәндә булған үҙгәреш, тоторокһоҙлок. *Беҙҙең як тәбиғәтенең кирелектәре күптән билдәле. Бына шуға ла урожай йыйыуға беҙ алдан әҙерләнергә тырыштык.* «Совет Башкортостаны», 1986, 6 сентябрь.

**КИРЕЛЕП-ҺУҘЫЛЫУ** *к.* Бер кирелеп, бер яҙылыу, кабат-кабат кирелеү. *Иркә ала бесәй ҙә .. әҙерәк еҫкәнеп йөрөгәс, һике аяғын шатыр-шотор килтереп кирелеп-һуҙылып тырнаны ла.., әбейҙең елкәһенә аркаһын терәп, рәхәтләнеп йокларға ятты.* Т. Йәнәби.

**КИРЕЛЕҮ** *к.* **1.** *төш. кар.* **киреү** 1, 2. *Киргегә кирелгән шәл.*

**2.** Ойоп, ойошоп киткән тәнде һуҙып яҙылдырыу. *Зәки торҙо, бик ныклап кирелергә .. самалағайны ла майор алдында әҙәпһеҙлек булыр тип тартынды.* С. Агиш. *Әмир яткан еренән быуындары шартлаганса киңәнеп кирелде.* Х. Ғиләжев.

**3.** Нык һуҙылып, тартылыу. *Көҙгө эсендә .. кара каштары кирелеп.., күҙҙәре йылмайып, [Ныязголдоң] игеҙәге ултыра.* Һ. Дәүләтшина.

**4.** Кайырылып, күкрәк яҙыу. *Кирелеп ултырыу.* ■ *Егет кирелеп уғын тартып ебәрә* (Әкиәттән).

**КИРЕЛТЕҮ** *к. кар.* **кирелдереү.**

**КИРЕЛӘНЕҮ** *к.* Ыңғайға килмәй карышыу; тиҫкәреләнеү. *[Мингәрәй:] Колхозда эшләргә кәрәк, тием. Абдуллаларҙың һүҙенә карап киреләнеүҙән бер ни сыкмаҫ.* А. Таһиров.

**КИРЕЛӘҮ** *к.* Насарланыу, уңмай башлау. *Эштәр киреләнеп тора әле.*

**КИРЕЛӘШЕҮ** *к. һөйл. кар.* **киреләнеү.**

**КИРЕМ** *и.* Тормоштағы, йәмғиәттәге төрлө каршылык, айырмалык. *Тормош диңгеҙендә күп мазлумдар тын ала алмай йәштәр ағыҙған.. Шулай тарих уҙған кирем менән, кандар менән каплап ил күген.* Б. Вәлит. *Бер һүҙҙән торорға, киремде уйламаҫка кәрәк.* М. Тажи.

**КИРЕНКЕ** *с.* Нык кирелгән; киң. *Киренке аҙым.*

**КИРЕНӘН** *р.* Кабаттан, яңынан. *Киренән эшләү. Киренән яҙыу.*

**КИРЕҮ** *к.* **1.** Нимәнелер тартып, йәйеп як-яғынан, ситенән нығытыу. *Шәл киреү.* ■ *Бал корттары сәскә һайын, кунаксыллап, килеп кунды. Үрмәкселәр ебәк ауын егәрләнеп, киреп куйҙы.* Б. Бикбай. / Киргегә кейҙереү (вак йәнлек тиреләрен). *Куян тиреһен киреү.*

**2.** Нык һуҙып тартылдырыу. *Янды киреү.* ■ *Егет .. йәйәһен киреп, керешен тарта башлаған* (Әкиәттән). / Киң итеп айырыу, аралы итеү. *Аякты киреп баҫыу.* ■ *Тимер ергә салкан төшөп, коластарын киреп, һуҙылып ятты ла: «Их, рәхә-әт ауыл һауаһы!..» — тине.* Б. Бикбай.

**3.** Кайырып яҙылдырыу. *Түште киреү.* ■ *Егет аяғына баҫып, киң күкрәген киреп, һыҙҙырып [йырлап] ебәрһә, тау-таш һыктаған .. күлдәр кайнап ыңғырашкан.* Ә. Вахитов. *Яурын киреп атыр өсөн уғым юк* (Әкиәттән).

♦ **Боғаз киреү** екереү, акырыу. *Коридорҙа [Рәхимйәндең] .. асыуланып кыскырып ебәргәне ишетелде. «Әй иҫең киткән икән шуның боғаз киреүенә»,— тине Камила.* «Ағиҙел», 1966, № 1. **Күкрәк киреү** *шул ук* **түш киреү** (*кар.* **түш**). **Колас киреү** *кар.* **колас. Корһак киреү** *кар.* **корһак.**

**КИРЕҺЕНСӘ** *р.* **1.** Капма-каршы рәүештә, бөтөнләй башкаса. *Киреһенсә хәл итеү.* ■ *Иртәгеһен бригадалар ял итер тип көткәйне Тимер*

*Янһаров, ләкин тынғыһыҙ Фатима киреһенсә эш итте: улар Якуп Мырҙабаевка ярҙамға китте.* Б. Бикбай.

**2.** *инш. мәғ.* Тейешлегә йәки уйлағанға ҡапма-ҡаршы. *Мин бәхетһеҙ булдым, тимәнем. Киреһенсә, йәшләй йәтимлекте үҙем өсөн бәхет һананым.* Ғ. Амантай.

**КИ́РЗА** [*рус.* ⟨ *нем.*] *и.* Махсус рәүештә эшкәртеп резиналанған бик беше ҡалын туҡыма (аяҡ кейеме тегеүҙә һәм башҡа эштә ҡулланыла). *[Гөлсәсәк:] Әй, Сәләхетдин ағай, тағы кирза итек алғанһығыҙ икән.. Бер айға ла түҙмәй, өтөлөп сыға.* Д. Исламов.

**КИРКЫРАЙ** *и. диал.* Сит-ят ер. *Киркырайға китеү.*

**КИРКӘ** [*рус.* кирка] *и.* Бер яғы осло, икенсеһе ялпаҡ булған оҙон башлы сүкеш рәүешендәге ҡорал (тау-таш эшендә ҡулланыла). *[Яһит:] Таш сығарыуға ла машина көсөн егербеҙ. Әле беҙҙең эш эшме ни ул! Көрәк менән ер ҡаҙабыҙ, лом менән, киркә менән таш ақтарабыҙ.* Ғ. Әхмәтшин.

**КИРЛЕ-МИРЛЕ** *р.* Бер тегеләй, бер былай; ҡырҫ-мырҫ. *Кирле-мирле йөрөү. Кирле-мирле һөйләшеү.* ■ *[Ҡыраубикә:] Йә, килен, ирең юлға сыҡҡанда кирле-мирле һөйләп торма инде! Үҙ хәлен үҙе белә торғандыр.* Д. Юлтый.

**КИРМӘН** *и. иҫк.* Бейек стена, тәрән урҙар менән уратылған хәрби нығытма; ҡәлғә. *Нисек тә илде нығытырға кәрәк. Үткән-сүткән генә түгел, хатта махсус килгән дошман яуы ла үтеп инә алмаҫлыҡ кирмән хәленә килтерергә кәрәк.* К. Мәргән.

**КИРСӘЙ** *и.* Кир төҫтәге ат исеме. *Кирсәй генә атым, ай, дуҫнәнем, дуҫнәнемә күрә йүгәнем* (Халыҡ йырынан).

**КИРТАРТМА** *и.* Һуҡҡанда һуҙылып, һуңынан кире тартыла торған ҡамсы. *[Сурағол] киртартмаһы менән старшинаның башынан аша бер тартты.* Т. Хәйбуллин.

**КИРТЕК** *и.* Киртеп алынған урын.

**КИРТЕКЛЕ** *с.* Киртеге булған, кирткелгән.

**КИРТЕКЛӘҮ** *ҡ.* Төрлө урындан киртек яһау, киртекле итеү.

**КИРТЕҮ** *ҡ.* Нәмәнең ситенән, ҡырынан мөйөшләп уйып алыу. *Киртеп тамға һалыу.*

◆ **Ҡолағыңа киртеп ҡуй** *ҡар.* **ҡолаҡ.**

**КИРТКӘС** *и.* Нимәнеңдер ситендәге киртек-киртек булып торған урын. *Кирткәс яһау.*

**КИРТКӘСЛЕ** *с.* Кирткәстәре булған. *Кирткәсле биҙәк. Кирткәсле шәл сите. Кирткәсле уҡа.*

**КИРТКӘСЛӘНЕҮ** *ҡ.* Кирткәслегә әйләнеү, кирткәсле булыу.

**КИРТКӘСЛӘҮ** *ҡ.* Кирткәсле итеү, кирткәс яһау. *Кирткәсләп тегеү.*

**КИРТЛӘС** *и.* Баҫҡысланып торған урын; һикәлтә. *Тау киртләсе. // Киртләс тау.* ■ *Мейес киртләсендә .. лампа төтәп ултыра.* Ғ. Ғүмәр. *Ташлы тауҙың киртләс ҡаяһында баҫып тора һомғол коралай.* Ҡ. Даян. *Агиҙелкәй буйы киртләс-киртләс, киртләстәре бөтөр боҙ киткәс* (Халыҡ йырынан).

**КИРТЛӘСЛЕ** *с.* Уйынтылы-уйынтылы; һикәлтәле. *Киртләсле тау.*

**КИРТЛӘСЛӘНЕҮ** *ҡ.* Киртләслегә әйләнеү, киртләсле булыу. *Киртләсләнеп торған тау.* ■ *Елкәһендә дан йөрөткән тауҙар киртләсләнеп ҡалҡа бейеккә.* Т. Арслан.

**КИРТЛӘСЛӘҮ** *ҡ.* Киртләсле итеү; киртләс яһау.

**КИРТЛӘҮ** *ҡ. ҡар.* **киртеү.** *Бүрәнә башын киртләү.*

**КИРТМӘС** *и. ҡар.* **кирткәс.**

**КИРТМӘСЛӘНЕҮ** *ҡ. ҡар.* **кирткәсләнеү.** *Урман үтә үткән был осҡалаҡ юл ағас тамырҙары менән киртмәсләнеп, үтеүселәрҙе үрле-түбәнле һиңкетеп маҙаһын ала.* Т. Хәйбуллин.

**КИРТМӘСЛӘҮ** *ҡ. ҡар.* **кирткәсләү.** *Тай ҡойроғон киртмәсләп ҡырҡыу.*

**КИРТТЕРЕҮ** *ҡ. йөкм. ҡар.* **киртеү.**

**КИ́РШӘҮ** *ҡ.* **1.** Ҡайсыны буштан-бушҡа бер асып бер ябыу; иксәү.

**2.** Ҡолаҡты һағайтып, алмаш-тилмәш алға-артҡа йөрөтөү (атҡа ҡарата); ҡайсылау. *[Зариф:] Тик кенә ултырығыҙ, осоп ҡалырһығыҙ, Турайғыр ҡолағын киршәй.* Й. Солтанов.

**КИРӘГӘ** [1] *и.* Кейеҙ тирмәнең нәҙек кенә ағастарҙы сатрашлап эшләгән һөлдәһе. *Кирәгә ағасы. Кирәгә бауы.* ■ *Беҙ .. тирмә эсенә керҙек. Мин тирә-яғынан ҡаҙыҡтар менән нығытылған, уртаһынан ҡайыштар, ҡыл ептәр менән бәйләп ҡуйылған кирәгәгә .. иғтибар менән ҡараным.* Ш. Шәһәр. *[Хужа батырҙарҙы] тирмәгә табан әйҙәне. Алты кирәгәле аҡ тирмә эсе йыһазлы ла, һый-хөрмәтле лә ине.* Ғ. Хөсәйенов. **Кирәгә башы** кирәгәнең түбә өлөшөн нығытҡан яҫы бау. *Ҡаҙаҡ ҡатын-ҡыҙы ҡул эшенә бик оҫта була. Улар бау ишә, кейеҙ баҫа, тире иләй, .. матур итеп төрлө төҫтәге йөндән кирәгә баштары .. туҡый.* Ғ. Ғүмәр.

**КИРӘГӘ** [2] *и.* Ике ҡыры ла үткер башаҡ. *Кирәгә башлы уҡ.*

**КИРӘК** [1] *и. диал. ҡар.* **ҡыр** [2]. *Кирәккә боролоу. Кирәктән килгән.*

**КИРӘК** [2] *и. һөйл.* Ҡала кешеһенең ҡала ситендәге йәйләү өйө; дача.

**КИРӘМ** *и.* **1.** Ағас башына менеү өсөн ҡулланылған ус яҫыуындай оҙон бау. *Ҡайыш кирәм.* ■ *Ҡарт бейек кирәм һирпеп менеп китте, ти* (Әкиәттән). *Ҡарағай ҙа ағас, бейек ағас, менеп булмай кирәм булмаған* (Халыҡ йырынан).

**2.** *диал.* Кирткәс.

◆ **Кирәм балта** *диал.* бағау.

**КИРӘМӘТ** [*ғәр.*] *и. ҡар.* **кәрәмәт.**

**КИС** *и.* **1.** Тәүлектең көн менән төн араһындағы бер мәле, ҡараңғы төшә башлаған ваҡыт. *Айлы кис. Ҡыраулы кис. Кискә табан. Кис һайын. Кис булыу. Көн кискә ауышты. Кискә ҡалыу. Иртәнән кискә саҡлы.* **Көндө кис итеү** көндө кискә еткереү. *Бөгөн Гөлбостан еңгәй иртәнсәктән балалары менән бер ҡабым аш йотҡаны юҡ. Шәкәрһеҙ коро сәй менән көндө кис итте.* Ғ. Дәүләтшин. **Ҡара кис** эңер яҡтыһы бөтөп, төн башланған ваҡыт. *Ҡара кискә ҡалыу.* **Ҡара таңдан ҡара кискә тиклем** *ҡар.* **таң** [1].

**2.** Ҡояш байып, көн тыуғанса үткән ваҡыт; төн. *Дүрт кис ҡуныу.* ■ *Егет .. өйөнә ҡайтып бер кис йоҡлай ҙа, батша ҡаршыһына баҫа* (Әкиәттән).

**3.** (*йәки* **кис менән**) *р. мәғ.* Ҡояш байып, ҡараңғы төшкән ваҡытта, төн булыр алдан. *Кис килеү.*

■ *Йәнмырҙа карт бер көн кис балаларын сыуал янына йыйҙы* (Әкиәттән). *Кис менән иртә яткан крәҫтиән халкы торганда ла иртә тора.* Ғ. Дәүләтшин.

♦ **Кис ултырыуы** кышкы оҙон кистәрҙә йыйналашып кул эше менән ултырыу. *Шулай бер вакыт дәртле кыҙ сагым, олатайҙарҙың өйөндә кыҙҙар менән кис ултырабыҙ.* Ғ. Ғүмәр. **Кәҙер кисе** *шул ук* **кәҙер кисәһе (***кар* **кисә** [1]**).**

● *Кис курккан, көндөҙ сыра яндырыр.* Мәкәл.

**КИСЕ** *р.* Билдәле бер кистә (билдәлелекте белдергән һүҙ менән кулланыла). *Ул кисе мин өйҙә булдым.*

**КИСЕГЕҮ** [1] (кисек*г*) *к.* Тейешле вакыттан һуңға калыу; һуңлау. *Кисегеп килеү.* ■ *Үтәләһе ашыгыс эшең һаман кала, һаман кисегә.* Х. Кунакбай.

**КИСЕГЕҮ** [2] (кисек*г*) *к.* Кояш байырға якынлашыу; кискә һаркыу. *Көн инде шактай кисеккән. Ауыл урамы буйлап көтөү кайтып килә.* Х. Мохтар.

**КИСЕКМӘҪТӘН** *р.* Оҙакка һуҙмай, тоткарлыкһыҙ, тиҙ. *Мәсем хан .. асыуланып кемгәлер ләгнәт кылды, кисекмәҫтән бында Бабсак килһен, тине.* «Бабсак менән Күсәк».

**КИСЕКТЕРГЕҺЕҘ** *с.* Кисектерергә ярамаған; ашығыс. *Һис кисектергеһеҙ саралар. Кисектергеһеҙ бурыстар.*

**КИСЕКТЕРЕЛЕҮ** *к. төш. кар.* **кисектереү.**

**КИСЕКТЕРЕҮ** *к.* Үҙ вакытынан һуңғарак күсереү. *Йыйылышты кисектереү.*

**КИСЕН** *р.* Кис булғас, кис менән; кискеһен. *Кисен генә ятһаң, иртән торһаң, һагынырһың мине, мин булмам* (Халык йырынан).

**КИСЕНЕҮ** *к. диал. кар.* **кисереү** [1] 1. *Үҙең дә күреп тораһың бит, Ғәләү байҙан көнлөккә эшләп кенә алган бер бот арыш. Ыумас ыуып кына ашаһаң да бер аҙна кисенеүгә етмәҫ, семья ишле бит, Ғаплатыйф агай.* Ғ. Ғүмәр.

**КИСЕРЕЛЕҮ** [1] *к. төш. кар.* **кисереү** [1] 1—4. *Һугыш йылында кисерелгән ауырлыктар. Ҙур үҙгәреш кисерелде.*

**КИСЕРЕЛЕҮ** [2] *к. төш. кар.* **кисереү** [2]. *[Үмәр:] Йыназаһыҙ күмелгән әҙәмдең гөнаһы теге донъяла бер нисек тә кисерелмәй тигән бит китапта.* Һ. Дәүләтшина.

**КИСЕРЕҮ** [1] *к.* **1.** Дауам иттереп үткәреү. *Ғүмер кисереү.* ■ *Батша йокоһоҙ был төндө нисек кисерергә белмәй аптыраган* (Әкиәттән).

**2.** Уй-фекер аша үткәреү. *Күңелдән кисереү.* ■ *Ошо мәлдә үлемеңде түгел, гүмереңде уйҙан кисерәм.* М. Кәрим.

**3.** Үҙ башында татыу, күреү (тормош хәлдәренә карата). *Ауырлык кисереү. Кайгы кисереү. Шатлык кисереү.* ■ *Катындарҙың күбеһе һалдатка гүмерен кисергән, ирҙәрен, балаларын югалткан.* Ғ. Ибраһимов. *Икһеҙ-сикһеҙ киң дала һуҙылып китә. Күпте күргән, бик күпте кисергән сал дала ул.* З. Биишева. / Түҙеп үткәреү, күтәреү. *Элек рахит менән ауырыган .. бала грипп эләктерһә, бик ауыр кисерә.*

**4.** Ниндәйҙер бер киҫкен хәлдә булыу, ошо хәлдә үтеү. *Көрәш осорон кисереү. Милләт булып формалашыу дәүерен кисереү.*

♦ **Баштан кисереү** 1) хәтерҙән үткәреү; 2) үҙ башында татыу; кисереү.

**КИСЕРЕҮ** [2] *к.* Шелтәһеҙ, язаһыҙ калдырыу, ғәфү итеү. *[Карт:] Бик насарлык кылып ташлаганһың бит, кустым. Бының өсөн халык һине кисермәҫ.* М. Тажи. *Яланбикәне үҙенең сабыйы янына күмделәр. Уны йыуышырга килгән бисәләр: «Ер күтәрмәҫлек ауыр гонаһ эшләгән был бәндәһен алла үҙе кисерһен инде»,— тип теләнеләр.* Һ. Дәүләтшина.

♦ **Кисерегеҙ!** мәшәкәт йәки уңайһыҙлык тыуҙырған өсөн ғәфү үтенеп әйтелә.

**КИСЕРЕҮ** [3] *к. йөкм. кар.* **кисеү** [1] 2.

● *Димсе диңгеҙ кисерер.* Әйтем.

**КИСЕРЕШ** *и.* Ниҙеңдер тәьҫиренән килгән көслө уй-тойғо. *Эске кисереш.* ■ *Әйтегеҙсе, родильныйҙа сакта ниҙәр кисерәһегеҙ, әсәләр? Мыҫкыл итеү түгел, тап ошондай кисереш менән тыуа һәр әҫәр.* Р. Ниғмәти. *Шофер, сират күперен киҫкәндәй, кырк кисереш менән тауга күтәрелде.* Р. Низамов.

**КИСЁТ** [*рус.*] *и. кар.* **янсык** 2.

**КИСЕҮ** [1] *к.* **1.** Һыуға төшөп, алға хәрәкәт итеү; һыуға төшөп атлау. *Кисеп йөрөү. Кисеп сыгыу.* ■ *Аттар йылганың уртаһына тиклем кисеп барҙы ла, муйындарын һуҙып эсә-эсә туктаны.* Ш. Янбаев. / Ниҙер эсенән йырып хәрәкәт итеү, йырып атлау. *Кар кисеү. Ысык кисеп барыу. Тубыктан баткак кисеп килеү.*

**2.** Атлап йәки берәй нәмә ярҙамында һыуҙы аша сығыу. *Елкән яһап, итәктәре менән ишеп, диңгеҙҙе кисәләр былар* (Әкиәттән). *Һыуын эстем, аша кистем, кармак һалдым ярынан* (Халык йырынан).

**3.** Урын аралығын үтеү; аша гиҙеп үтеү. *Йыһан кисеү. Юл кисеү.* ■ *Поезд өсөн төнгө юлдарҙың куркынысы юк, яланда ла, урманды ла барыһын да бер тигеҙ кисә.* Д. Юлтый. *Каҙак килгән сикһеҙ дала кисеп башы карлы Тянь-Шань тауынан.* К. Даян.

**4.** *кусм.* Дауам итеп үтеү. *Бер йыл кисеп китә, тагы һугыш башлана* (Әкиәттән).

**5.** *кусм.* Кәүҙәләнеп, бер-бер артлы баштан үтеү. *Уйҙан кисеү.* ■ *Боронго вакыттар артынан береһе бөгөнгө кеүек күңелемдән кисеп, күҙ алдыма килә ине.* М. Ғафури.

**6.** *кусм.* Үҙ башында татып үткәреү, күреү. *Ғүмер кисеү.* ■ *Яуҙа минең менән бергә булып, кайгыларҙы бергә кистегеҙ.* Х. Кәрим. *Кыуат һымак ирҙәр һирәк, акыл менән дау кисә* (Халык йырынан).

♦ **Баштан кисеү** үҙ башында татыу, күреү, кисереү. *Беҙ хат яҙғанда бөтә баштан кискәндәрҙе, окоп тормоштарын яҙабыҙ.* Д. Юлтый. **Ваз кисеү** *кар.* **ваз. Донъянан кисеү** *кар.* **донъя. Ут** (*йәки* **ут-һыу) кисеү** күп нәмә, күп ауырлык күреү. *Уттар-һыуҙар кисте Сафа — сыныккан һалдат.* Б. Бикбай.

● *Агын һыуҙы ат кисер, ауыр көндө ир кисер.* Мәкәл. *Кисеү бирмәс йылга юк, батыр еңмәс дошман юк.* Мәкәл.

**КИСЕҮ** [2] *и.* Һыуҙың кисеп аша сығып йөрөй торған һай урыны. *Элегерәк беҙ бала сакта кисеү бирмәгән Һакмар бөтөнләй һайыгып калган.* С. Кулибай.

**КИСКЕ** *с.* Көн аҙағындағы, кис ваҡытындағы. *Киске аш. Киске ел. Киске һалҡын.* / Кис була торған, кисен үткәрелгән йәки эшләнгән. *Киске тамаҡ. Киске һауым. Киске уҡыу.* **Киске уйын** йырлап-бейеп күңел асыу өсөн кис (ғәҙәттә асыҡ һауала) үткәрелгән йәштәр уйыны. *Бөгөн ҡыҙҙар эштән ҡайтҡанда киске уйынға сығырға һөйләштеләр.* Д. Исламов.

♦ **Киске мәктәп** *ҡар.* **мәктәп** 1.

● *Иртәнге ашты ташлама, кискеһен башлама.* Мәҡәл.

**КИСКЕЛЕК** *с.* **1.** Кискә тәғәйенле, кис үтәлергә тейешле. *Кискелек һауым.*

**2.** *и. мәғ.* Киске ваҡыт, кислек. *[Малдар] урештән кискелеккә төйәк алдына ҡайтҡанда Ҡараүыҙ уларҙы барып ҡаршылар булды.* С. Кулибай.

**3.** *и. мәғ. һөйл.* Киске аш. *Кискелекте ашап алғас, Салих китапты асты ла ҡысҡырып уҡый башланы.* Х. Мохтар.

**КИСКЕҺЕН** *р.* Кис менән, кис булғас; кисен. *Кискеһен һалҡынайтып ебәрҙе.*

**КИСКӘ** *р.* Кис булыуға, ҡараңғы төшөүгә. *Егет кискә .. өйөнә ҡайтып керһә, өй эсе гөлт итеп йыйыштырып ҡуйылған, ти* (Әкиәттән).

**КИСКӘРЕ** *р. диал.* Кискеһен.

**КИСҠОРОН** *р.* Кискә табан. *Берҙән-бер мәлде, көҙ көнө, кисҡорон, батшаның уландары ҡарындаштары менән баҡсала .. йөрөргә булған* (Әкиәттән).

**КИСЛЕК** *и.* Киске ваҡыт, кискелек. *Көн кислеккә ауышҡайны инде. Ҡояш нурҙары ла талғынлана төштө.* Д. Исламов.

**КИСЛЕКЛЕ** *с.* Кисен оҙаҡ йоҡламай ултырыусан. *Кислекле кеше.*

**КИСЛЕКҺЕҘ** *с.* Кисен түҙә алмай, тиҙ генә йоҡларға ятыусан. *Кислекһеҙ кеше.*

**КИСЛОРО́Д** [*рус.*] *и.* Химик элемент, тын алыу һәм яныу өсөн кәрәк булған, водород менән ҡушылғанда һыу хасил иткән, һауа составындағы еҫһеҙ, төҫһөҙ газ. *Кислород берләшмәләре.* **Кислород етешмәү** *мед.* тән туҡымаларында кислородтың аҙайыуы.

♦ **Кислородлы мендәр** һауа етмәгәндә кислород һулатыу өсөн ҡулланылған медицина приборы.

**КИСЛОТА́** [*рус.*] *и.* Составында тоҙ барлыҡҡа килгәндә металл менән алмашыныуға һәләтле водороды булған әскелт химик берләшмә. *Азот кислотаһы. Көкөрт кислотаһы. Тоҙ кислотаһы.*

♦ **Аскорбин кислотаһы** *ҡар.* **аскорбин. Һөт кислотаһы** матдәләр алмашыныу процесында барлыҡҡа килгән бик мөһим продукт (һыуҙа тиҙ ирей торған төҫһөҙ кристалл рәүешендә була).

**КИСЛО́ТНОСТЬ** [*рус.*] *и. ҡар.* **әселек** [1].

**КИСЛӘТЕҮ** *к.* **1.** Кис итеү, кискә еткереү. *Ахырҙа .. хәлдән тайған ҡыуғынсылар, оҙон көндө кисләтеп, йәсту ваҡытында ғына йәйләүгә кире ҡайтҡан.* Н. Иҙелбай.

**2.** Кискә ҡалыу. *[Булат:] Уҡыуҙан кисләтеп кенә ҡайттым.* К. Кинйәбулатова. *Өмә менән килеп, кисләтеп, төн ҡундылар өйкөм төбөндә.* Ғ. Амантай.

**КИСЛӘТӘ** *р.* Кис булғас, кис менән. *Ситәндең ишеген асыҡ ҡалдырып, кисләтә ауылға ҡайтып киттек. Кәзә меҫкен оя эсендә тороп ҡалды.* С. Кулибай.

**КИСЛӘҮ** *к.* **1.** Кис булыу, кискә һарҡыу. *Бер кеше китеп барғанда көн кисләгәс, ауылға инеп, фатирға төшкән* (Әкиәттән).

**2.** Кискә, һуңға ҡалыу. *Эште бөтөрөп ҡайтайым тип, кисләп киттем.*

**КИСМӘЛЕК** *и. диал. ҡар.* **кисеү** [2].

**КИСТЕ** *р.* Билдәле бер кистә; кисе. *Был кисте ул [Сәғиҙә], йәштәр уйынын ҡарап, күңел асып ҡайтыр өсөн клубҡа барҙы.* М. Тажи.

**КИСТЕРЕҮ** *к. йөкм. ҡар.* **кисеү** [1] 1. *Йылғаны кистереп сығыу.*

**КИ́СТОЧКА** [*рус.*] *и. ҡар.* **бумала.** *Ә Сания Зариповабыҙ гәжәп оҫта художник булып сыҡты. Ҡулында кисточкалар уйнап ҡына тора.* Н. Мусин.

**КИСТӘН** *р.* Үткән кис, кис менән. *Фәғилә кистән ҡыҙына яңы күлдәк теккән, өҫ-башын ямаған, бөтәйткән.* Б. Бикбай.

**КИСТӘН-КИС** *р.* Кис көндәре, кистәрен. *Былтыр ике-өс ай кистән-кис кенә баланы бергә алып ултырған сакта [Зәйнәп] Диләне уҡырға-яҙырға өйрәткәйне. Хәҙер үҙе .. тырышып-тырышып өйрәнә.* Һ. Дәүләтшина.

**КИСТӘРЕН** *р.* Кис көндәре. *Больницала Ғәйшә менән дуҫлаштыҡ.. Кистәрен уның менән оҙаҡ һөйләшеп ултырабыҙ.* С. Агиш.

**КИСӘ** [1] *и. иҫк. ҡар.* **кис** 1. *Айҙың ун дүртенсе кисәһе.*

♦ **Ҡәҙер кисәһе** рамазан айының 27-се кисе (дини ҡараш буйынса, теләгән теләктәр ҡабул була торған кис; йәнәһе, ошо кистә күк ҡабағы асылып, кешенең теләге аллаға шунда уҡ барып етә). *[Тимеркәй:] Бай ағай өй эсе менән ҡәҙер кисәләрендә намаҙ уҡығанда, теләк теләгәндә, мин дә теләнем.. Берәһе лә ҡабул булманы.* Д. Юлтый.

**КИСӘ** [2] *и.* Берәй ваҡиғаға бағышланған киске йыйылыш. *Байрам кисәһе. Тантаналы кисә. Тематик кисә. Шиғыр кисәһе. Әҙәбиәт кисәһе.* ■ *Үтәголов уҡынсы класс уҡыусыларына арналған хушлашыу кисәһенән төнләтеп ҡайтып йоҡларға ятты.* Ж. Кейекбаев. *Хәтереңдәлер, улым, оҙатҡанда кескәй генә кисә яһаныҡ.* Р. Ниғмәти.

**КИСӘ** [3] *р.* **1.** Үткән көнө, бөгөнгөнән алдағы көндө. *Кисә кис.* ■ *Ҡыҙмаса баштан берәүҙе кисә хаҡһыҙ маҡтаным.* М. Кәрим.

**2.** *и. мәғ.* Кисәге көн, кисә булған көн. *Кисәнән бирле.* ■ *Кәмәгә төшөрбөҙ, балыҡ тоторбоҙ тип, кисәнән һөйләшеп ҡуйғайныҡ.* М. Хәйҙәров.

**КИСӘГЕ** *с.* **1.** Кисә булған, үткән көнгө. *Кисәге хәл. // Кисәгене ҡабатлау.* ■ *Кисәге ваҡиға миңә төш кеүек тойола.* Д. Юлтый. *[Карттың] һөйләгәндәре миңә кисәгеләрҙе хәтерләргә ярҙам итте.* С. Агиш.

**2.** *р. мәғ. диал. ҡар.* **кисә** [3]. *Кисәге ҡайҙа булдың?*

**КИСӘГЕНӘК** *р. ҡар.* **кисә** [3].

**КИСӘЙЕҮ** *к. ҡар.* **кисләү** 1.

**КИСӘЛЕ-БӨГӨНЛӨ** *р.* Һуңғы ике көн эсендә. *Кисәле-бөгөнлө көн йылы тора.*

**КИСӘҢГЕ** *с. һөйл. ҡар.* **кисәге** 1.

**КИСӘҮ** *с.* **1.** Һуң ҡасҡан, һуңға ҡалып быуаҙыған (ғәҙәттә һыйыр, һарыҡ-кәзәгә ҡарата әйтелә).

**2.** *р. м. диал.* Һуң. *[Гөләйшә:] Бөгөн кисәү инде, ул [Булат] ҡайтып йөрөмәҫ.* К. Кинйәбулатова.

**КИСӘҮЕЛЛӘҮ** *ҡ.* Кискә яҡынлау, кискә ауышыу. *[Кормой:] Ярай мин дә ҡайтайым инде, көн дә кисәүелләп китте, бик оҙаҡ ултырҙым* Б. Бикбай.

**КИСӘҮЛӘҮ** *ҡ.* **1.** Кис булыу, кискә ауышыу; кисләү. *Көҙгө көн бик ҡыҫҡа була бит ул, һә тигәнсе көн кисәүләй ҙә ҡуя.* Т. Йәнәби.

**2.** Һуңға ҡалыу, һуңлау. *[Ныяҙгол:] Ҡана, бисә, йыйһындар сәйҙе, мин өйләгә кисәүелләйәм.* Һ. Дәүләтшина.

**КИҪЕГЕҮ** (киҫек≠) *ҡ. кар.* **киҫәү** [2].

♦ **Киҫеккер** әрләгәндә әйтелә.

**КИҪЕК** [1] *с.* **1.** Киҫеп алынған, киҫелгән. *Киҫек ағас.*

**2.** Өҫкө өлөшө яҫылыҡ менән киҫелгән. *Киҫек конус. Киҫек пирамида. Киҫек цилиндр.*

**КИҪЕК** [2] *и. мат.* Ике яҡтан киҫелгән һыҙыҡ.

♦ **Күңелдә киҫек тотоу** күңелдә шик тотоу. *[Морат:] Асия онотҡандыр инде ул мине. [Ғарифә:] Әй, онотоу ҡайҙа ул! Күңелеңдә киҫек тотма. Асия кеүек ҡатынды хуплар өсөн һүҙ юҡ.* С. Кулибай.

**КИҪЕКТЕРЕҮ** *ҡ. кар.* **киҫәтеү.** *[Шәрифулла:] Һин исмаһам ҡыҙыңа әсә була бел. [Ҡатыны:] Анһыҙ ҙа киҫектереп, әрләп торамсы.* Я. Хамматов.

**КИҪЕКҺЕҘ** *с.* **1.** Әйткәнде ҡолағына элмәүсән; тыңлауһыҙ. *[Сәйҙә:] Һарыҡтарҙы туғайға төшөрмәгеҙ, тип әллә нисә рәт әйттем. Ул Нәби бигерәк киҫекһеҙ. Әйтһәң, әрепләшеп бара.* М. Буранғолов.

**2.** *күсм. диал.* Өҙләкһеҙ. *Киҫекһеҙ буран.* ■ *Арыу-талыуҙы белмәгән киҫекһеҙ ел генә һаман ял итергә теләмәне.* Я. Хамматов.

**КИҪЕКҺЕҘЛӘНЕҮ** *ҡ.* **1.** Киҫекһеҙгә (1 мәғ.) әйләнеү, киҫекһеҙ булыу.

**2.** Үҙ һүҙләнеп үҙенекен дауам итеү, киҫәмәү. *Яралылары кот оскос тауыш менән ер йыртып аҡыра. Пуля тейеп өлгөрмәгәндәре киҫекһеҙләнеп һаман алға бара.* Ж. Кейекбаев.

**КИҪЕЛЕШ** *и.* Киҫеп алынған, киҫеп төшөрөлгән урындың йөҙө. *Арҡыры киҫелеш. Буй киҫелеш.* ■ *Геологик киҫелеш бәләкәй масштабта ер ҡатламдарының киҫелгән йөҙөн күрһәтә.* К. Тимерғазин.

**КИҪЕМ** *и.* Киҫкән, ҡырҡҡан урын. *Конус киҫемдәре.*

**КИҪЕНДЕ** [1] *и. кар.* **ҡырҡынды** [1].

**КИҪЕНДЕ** [2] *и. кар.* **ҡырҡынды** [2].

**КИҪЕРЛЕ** *с. диал.* Үҙ һүҙле, кеҙе.

**КИҪЕҮ** *ҡ.* **1.** Ярып, телеп үтеп инеү, йәрәхәтләү; ҡырҡыу (үткер нәмәгә ҡарата). *Ҡайсы тупарған, киҫмәй.* / Баҫып, өйкәп ауырттырыу; ҡырҡыу. *Артмаҡтың бауы иңбашты киҫә.*

**2.** Үткер ҡорал менән өҙөү, өлөштәргә һәм киҫәктәргә бүлеү; ҡырҡыу. *Киҫеп алыу. Киҫеп төшөрөү. Туҡмас киҫеү.* ■ *Өй артында .. Вәлетдин утын киҫә.* М. Кәрим. / Күпләп ауҙарыу; әҙерләү. *Ағас киҫеү. Урман киҫеү. Әрҙәнә киҫеү.*

**3.** *диал. кар.* **бесеү** [1]. *Күлдәк киҫеү.*

**4.** Үткер нәмә менән йәрәхәтләү; ҡырҡыу. *Бармаҡты киҫеп ебәреү. Яңылыш ҡулды киҫеү.*

**5.** Ниҙер аша үтеп, икегә айырыу; ҡырҡыу. *Беҙ килгән юлды киҫеп оло юл ята.* С. Кулибай. *Юлдың тауҙы киҫеп үткән ерендә генә, бер ҡараңғы мәмерйә алдында тугыҙ башлы дейеү ята, ти* (Әкиәттән). / *күсм.* Арҡыры төшөү, юлды кәртәләү. *Йомро ғына тояҡ ай йылҡының юлҡайҙарын киҫер ҙә йәнлек юҡ* (Халыҡ йырынан).

**6.** *күсм.* Бер өлөш бүлеп, айырыу; ҡырҡыу. *Тәжрибә үткәреү өсөн колхоз ер киҫеп бирҙе.*

**7.** *күсм.* Бер өлөш бүлеп алып, кәметеү; ҡырҡыу. *Баҡсаны киҫеү. Сабынлыҡты киҫеү.* ■ *Айбулаттың эш хаҡын, ашаған өсөн тип, киҫеп алып ҡалдылар.* Һ. Дәүләтшина.

**8.** *күсм.* Үлтереү.

**9.** *күсм.* Кимереп, йырып ашау. *Быйманы көйә киҫкән.*

**10.** *күсм.* Ҡырҡа ҡаршы төшөп туҡтатыу.— *Хәбирҙе ниңә сәй эсергә ултыртмайһың? — тине [Абыстай].— Бала-сағаға һуңынан эсергә лә ваҡыт бар,— тип, уның һүҙен киҫте әсәй.* Ғ. Хәйри. **Ҡырт киҫеү** эште, һүҙҙе ҡәтғи рәүештә ҡырҡа туҡтатыу, өҙөү. *[Мансаф:] Беҙҙең әсәй киҫкен холоҡлораҡ инде ул. Оҡшамаһа, ҡырт киҫә лә ҡуя.* Ш. Биҡҡол. / Хәл ҡылым формаларында килеп, эш-хәлдең ҡәтғилеген белдерә; ҡәтғи рәүештә. *Киҫә әйтеү. Киҫеп яуап биреү.*

**11.** *күсм.* Юҡҡа сығарыу, бөтөрөү. *Ғүмерҙе киҫеү. Өмөттө киҫеү. Ризыҡты киҫеү.* ■ *Таң елдәре .. болоттарҙы ҡыуып, көн ҡаршылап, төн караһын таңда киҫтеләр.* Ғ. Амантай.

**12.** *күсм.* Әсеттереп, яндырып ауырттырыу. *[Гөлйөҙөмдөң] тәне ут кеүек яна.., билен ураптып киҫә.* Һ. Дәүләтшина. *Иренемде ҡаршы елдәр, киҫте, сәсемдә — сал йылдар туҙаны.* М. Кәрим. / Әрнетеп ғазапландырыу. *Һандуғаскай, наҙлым, ҡуй һайрама, һайрап йәш бәгеремде киҫмәй тор.* Ш. Бабич. *Өҙә үҙәкте, киҫә йөрәкте, хуш бул, тигән һүҙҙәре* (Халыҡ йырынан).

**13.** *күсм.* Интектереү, яфа сиктереү, тынғылыҡ бирмәй ҡаҡшатыу. *Ғатаулланың ауырыу киҫкәндән һуң әле ныгынып етмәгән аңы, төш күргәндәге һымаҡ, аңҡы-тиңке килеп тора.* Й. Солтанов. **Муйынды киҫеү** *кар.* **муйын.** *Уйнар ҙа инем, көлөр ҙә инем, фәҡирлеккәй киҫә муйынды* (Халыҡ йырынан).

♦ **Аҫтан киҫеү** уҫал уй менән аҫтыртын эш алып барыу. **Аҫтан киҫеп, өҫтән ямау** аҫтыртын яуыз эш эшләп, яҡшы булып күренеп йөрөү. **Йылан аяғын киҫкән** *кар.* **йылан.**

● *Дуҫың бысағы менән мөгөҙ киҫ, дошманың бысағы менән кейеҙ киҫ.* Мәҡәл. *Үтмәҫ бысаҡ ҡул киҫер.* Мәҡәл. *Әйелгән башты ҡылыс киҫмәй.* Мәҡәл.

**КИҪЕШЕҮ** *ҡ.* **1.** *урт. ярҙамл. кар.* **киҫеү** 1, 2, 6. *Утын киҫешеү.*

**2.** Үҙ-ара киҫеп үтеү. *Киҫешеү нөктәһе. Автомобиль юлы тимер юл менән киҫешкән урын.*

**КИҪКЕЛӘНЕҮ** *ҡ. төш. кар.* **киҫкеләү.** *Урта Себер яйлаһы уйһыу ерҙәр менән киҫкеләнгән.*

**КИҪКЕЛӘҮ** *ҡ.* Өлөш-өлөшкә киҫеү; турау, ҡырҡҡылау. *Кейеҙбай алмаһын киҫкеләй ҙә, ҡыҙға ҡаптырып бөтә* (Әкиәттән).

**КИҪКЕН** *с.* **1.** Үҙәккә үткес, әсе (елгә ҡарата). *Күкрәне күк, тетрәне ер, иҫте киҫкен көслө ел.* Ш. Фидаи.

**2.** Ҡапыл булған, ҡыҙыу. *Киҫкен хәрәкәт. Киҫкен аҙымдар менән.* ■ *Ямал, башын һелкеп, киҫкен бер хәрәкәт менән: — Саҡырма, үҙем барам,— тине.* М. Тажи.

**3.** Ҡапыл, көтмәгәндә булған, һиҙелерлек ныҡ. *Киҫкен үҙгәреш. Киҫкен боролош.*

**4.** Бик ҡатмарлы, ауыр һәм ҡыйын. *Киҫкен көрәш.* ■ *Һуғыш беҙҙең быуын кешеләренең һәм минең биографиямдың иң киҫкен өлөшө.* Н. Нәжми.

**5.** Тиҙ хәл итеүҙе талап иткән, ауыр һәм көсөргәнешле, ҡырҡыу. *Киҫкен мөнәсәбәт.* ■ *Киҫкен шарттарҙа 1919 йылдың октябрендә Куҙәйҙә партияның кантон комитеты төҙөлә.* Н. Зарипов.

**КИҪКЕНЛЕК** *и.* Эш-хәлдәге көсөргәнешлек, киҫкен хәл. *Үҙ-ара мөнәсәбәттәге киҫкенлек.* ■ *1921 йылғы аслыҡтан һуң илдә ауыл хужалығын күтәреү бурысы бөтә киҫкенлеге менән килеп баҫты.* Ғ. Хөсәйенов.

**КИҪКЕНЛӘШЕҮ** *ҡ.* Көсөргәнешле, киҫкен төҫ алыу; ҡырҡыулашыу. *Хәл киҫкенләште. Үҙара мөнәсәбәт киҫкенләште.* ■ *Бөтәһенән элек хеҙмәт менән капитал араһындағы ҡаршылыҡтар киҫкенләшә.* «Совет Башҡортостаны», 1986, 26 февраль.

**КИҪКЕНЛӘШТЕРЕҮ** *ҡ.* Киҫкен хәлгә килтереү, көсөргәнешле итеү. *Хәлде киҫкенләштереү.*

**КИҪКЕС** *и.* Тимер ҡырҡыу өсөн хеҙмәт иткән үткер ҡорал; ҡырҡҡыс. *[Ғөбәй — Ғарифҡа:] Ә бит бер үк деталде бер юлы бер нисә киҫкес менән дә эшләргә мөмкин.* Н. Иҙелбай.

**КИҪКӘ** *и.* **1.** Йыуан түмәр. *Ярыҡ киҫкә.* ■ *Саңҡуй тауы башына килеп еткәс, ул [Егет] артмағын һалып, юл буйындағы киҫкә өҫтөнә ултырҙы.* Ж. Кейекбаев. / Йығылып, сереп ятҡан йыуан ағас. *Эт бик оҙаҡ күренмәй торҙо ла, киҫкә артынан өрә-өрә атылып килеп сыҡты.* Хикәйәләр, 1974.

**2.** *күсм.* Ауыр ҡуҙғалыусан, яй кешегә ҡарата әйтелә.

◆ **Сөрөк киҫкәһе** эрләгәндә әйтелә.

**КИҪКӘК** *и. кар.* **киҫкә** 1.

**КИҪМӘ: киҫмә ел** әсе, үҙәккә үткес ел.

**КИҪМӘК** *и.* Ҡолаҡлы ҙур ағас күнәк. *Һыу киҫмәге.* ■ *Ҡар баҙҙарында киҫмәк-киҫмәк балы, киҫмәк-киҫмәк һары майы ултыра.* Н. Асанбаев.

**КИҪТЕРЕҮ** *ҡ. йөкм. кар.* **киҫеү.** *Ағас киҫтереү.*

● *Астан ҡаҙан аҫтырма, ялангастан кейем киҫтермә.* Мәҡәл.

**КИҪТӘН** [*рус.* кистень] *и.* Ҡыҫҡа ғына һапҡа сылбыр менән гер йәки башҡа шундай ауыр нәмә тағылған боронғо һуғыш ҡоралы.

**КИҪТӘНДӘЙ** *с.* Саманан ҙур; уҫлаптай. *Киҫтәндәй бала. Киҫтәндәй икмәк киҫәге.*

**КИҪӘ** [1] *р.* **1.** Ҡырҡа төшкән, ныҡ текә. *Киҫә төшкән бейек яр.*

**2.** Ҡап-арҡыры йүнәлештә; текә. *Салғыны киҫә яныу.* ■ *Юлым киҫә борола, инде тап үҙебеҙгә ҡарап китә.* К. Кинйәбулатова.

◆ **Киҫә арҡыры** *кар.* **арҡыры** [1] 1. **Киҫә бысаҡ ҡаршы** *диал.* ҡырҡа ҡаршы.

**КИҪӘ** [2]: **киҫә ел** *шул уҡ* **киҫмә ел** (*кар.* **киҫмә**). *Иҫә генә, ай ел иҫә, киҫә елдәр киҫкә көсәйер* (Халыҡ йырынан).

**КИҪӘК** [1] *и.* **1.** Бөтөндән бүленгән бер өлөш, бәләкәй бер өлөш. *Балсыҡ киҫәге. Икмәк киҫәге. Ҡағыҙ киҫәге. Таш киҫәге. Киҫәктәргә бүлеү.*

**2.** Сама менән бүлгеләнгән нәмәнең бер өлөшө (төп һандар менән ҡулланыла). *Бер киҫәк икмәк. Ике киҫәк ситса.* ■ *[Тимашев] берәр киҫәк май, колбаса менән барыбыҙҙы ла һыйланы.* Д. Юлтый. / Һатыу өсөн өлөшләп эшләнгән даналы нәмәнең береһе. *Бер киҫәк һабын.*

**3.** Әҫәрҙең бер бүлеге, бер өлөшө. *Романдың беренсе киҫәге. Өс киҫәктән торған симфоник әҫәр.*

**4.** *грам.* Һүҙ йәки һөйләмдең грамматик функцияға эйә булған бер өлөшө. *Айырымланған киҫәктәр. Баш киҫәктәр. Тиң киҫәктәр. Һөйләм киҫәктәре. Эйәрсән киҫәк.*

**5.** *диал. кар.* **ишарат** 2. *Үҙәк усадьба тигәненең бөтә хазинаһы иҫке шпалдарҙан өйөлгән бер өй киҫәгенән .. тора ине.* Д. Исламов.

◆ **Йән киҫәге** *кар.* **йән. Хат киҫәге** бәләкәй генә хат. *[Айбулат] ике илеләй генә ҡағыҙға хат киҫәге яҙып, Яланбикәнән Гөлйөҙөмгә бирҙертте.* Һ. Дәүләтшина.

**КИҪӘК** [2] *р.* Көтмәгәндә, ҡапыл. *Төндә Имәнтауҙан Йомағужа ҡарттың киҫәк кенә вафат булыуы тураһында хәбәр иттеләр.* Ә. Вәли. *Мин киҫәк шикләнә төштөм: ысынлап та, [күгәрсендәр] икенсе яҡҡа осоп китһә, нишләрһең!* Н. Ҡәрип.

**КИҪӘКЛЕ** *с.* Киҫәк-киҫәк рәүешендәге. *Киҫәкле һабын.*

**КИҪӘКЛӘНЕҮ** *ҡ.* Киҫәктәргә бүленеү, ваҡланыу. *Киң Агиҙел. Яҙғы ташҡын һыуҙар һыймай аға йылға ярына. Киҫәкләнеп йөҙгән ҡалын боҙҙар, яр таштарын айҡап ярыла.* Ҡ. Даян.

**КИҪӘКЛӘҮ** *ҡ.* Киҫәктәргә бүлеү, ваҡлау. *Киҫәкләп турау.*

**КИҪӘКСӘ** *и. лингв.* Айырым һүҙ йәки һөйләмгә ниндәй ҙә булһа бер мәғәнә үҙенсәлеге өҫтәй торған ярҙамлыҡ һүҙ (бит, ғына, да, -дыр, -мы һ. б.). *Икеләнеү киҫәксәләре. Көсәйтеү киҫәксәләре. Сикләү киҫәксәләре.*

**КИҪӘКТӘН** *р.* Бик ҡапыл, ҡырҡа. *Киҫәктән арҡа боролоу.*

**КИҪӘЛТӘ** *и. диал.* Һикәлтә. *Бейек тауҙарҙы ярып йырғанаҡтар төшә, тағы ла киҫәлтә тау һырты китә.* Н. Ҡәрип.

**КИҪӘТЕЛЕҮ** *ҡ. төш. кар.* **киҫәтеү.** *Йыйылыштың кисектереләсәге алдан киҫәтелде.*

**КИҪӘТЕҮ** *ҡ.* Алдан белдереү, иҫкәртеү. *Киҫәтеп ҡуйыу. Киҫәтеп тороу. Киҫәтеп әйтеү.* ■ *Бабай үҙенең улдарына: «Бәләкәйһегеҙ әле, кейек ауларға йәшегеҙ етмәгән, .. һәләк булырһығыҙ»,— тип гел генә киҫәтә торған булған* (Әкиәттән). *[Куңелсәков:] «Мөһим эшем бар, бер кемде лә индермә!» — тип секретарына киҫәтте.* Ф. Иҫәнғолов.

**КИҪӘҮ** [1] *и.* **киҫәү ағасы,** *диал.* **1.** Тәртешкә. **2.** Торонбаш.

♦ **Тамуҡ киҫәүе** дин ҡанундарын үтәмәгән, динде һанға һуҡмаған кешене әрләгәндә әйтелә. *[Хәйерелбанат:] Тамуҡ киҫәүе! Кафыр! Нисек телең барып .. шундай динһеҙ һүҙҙәр һөйләйһең, һары урыҫ!* З. Ғәлимов.

**КИҪӘҮ** [2] *ҡ.* Әйткәнде тыңлау, әйткәнгә ҡолаҡ һалыу. *[Командир — Әхмәҙигә:] Мин һеҙгә .. әйттем бит, яҡшы ҡарағыҙ, халыҡты рәнйетмәгеҙ тинем. Был ниндәй киҫәмәгән халыҡ.* Һ. Дәүләтшина.

♦ **Киҫәмәгән кире байтал** киҫекһеҙ кешегә шелтәләп әйтелә.

**КИҪӘҮҺЕҘ** *с. диал.* Киҫекһеҙ.

**КИТ** [1] [*рус.* ⟨*гр.*] *и.* Һыны менән балыҡҡа оҡшаған иң ҙур имеҙеүсе диңгеҙ хайуаны. *Кит майы. Кит мыйығы. Кит аулау.*

**КИТ** [2], **кит** әле *ымл.* **1.** Берәй нәмәгә ышанып етмәй, аптырап ҡалғанда әйтелә. *«Саниәңдан ҡолаҡ ҡаҡтың инде»,— тине Билалов .. Егеттең ҡото алынды: «Кит, әй! Ысынлапмы?»* Д. Исламов.

**2.** Берәүҙең һүҙен йәки үҙен кире ҡаҡҡанда әйтелә. *[Шәрифә:] Кит, алйот, .. башымды әйләндереп йөрөмә.* Һ. Дәүләтшина.

**КИТА́ЙКА** [*рус.*] *и.* Ғәҙәттә күк төҫтәге беше мамыҡ туҡыма.

**КИТАП** [*ғәр.*] *и.* **1.** Биттәре билдәле бер тәртиптә йыйылып, тышлап төпләнгән баҫма (шулай уҡ боронғо ҡульяҙма) әҫәр. *Боронғо китап. Ҙур китап. Рәсемле китап. Китап бите. Китап күргәҙмәһе. Китап кәштәһе. Китап лавкаһы. Китап сауҙаһы. Китап баҫыу. Китап сығарыу.* ■ *Зөлхәбирә һылыу китап уҡый, ҡыя ябып шәлен башына* (Халыҡ йырынан). / Айырым баҫма итеп баҫып сығарылған йәки баҫыласаҡ, билдәле бер эстәлектәге ҙур күләмле әҫәр. *Белешмә китап. Йыр китабы. Тарихи китап. Әҙәби китап. Китап яҙыу.* ■ *Эй, китап,.. күп белемдәр бир миңә! Эй китап, мин аңғыраны төҙ юлға көндерһәнә.* Ш. Бабич. *Китап — белем шишмәһе, китап, иң ҡиммәтле рухи байлыҡ.., әммә ошо байлыҡтың кәштәләрҙе биҙәп ятҡаны түгел, ә ҡулда булғаны яҡшыраҡ.* «Совет Башҡортостаны», 1985, 13 ноябрь.

**2.** Ҙур әҫәрҙең айырым баҫылған бер киҫәге. *Дүрт китаптан торған әҫәр.*

**3.** *иҫк.* Боронғо дини әҫәр. *Китап һүҙе. Фал китабы.* ■ *[Хисамый:] Китап әйткән, әгәр биш быуын айырылған булһалар, үҙ кәрҙәш-ырыуыңа өйләнергә ярай, тигән.* Б. Бикбай. **Китап асыу** китапҡа ҡарап кешенең яҙмышын әйтеү; күрәҙәлек итеү.

**4.** *диал. ҡар.* **ҡатлансыҡ** [2].

**КИТАПСА** *р.* Китап теле менән, китапта яҙылғанса. *Китапса һөйләү.*

**КИТАПСАЛАУ** *ҡ.* Китап теленә килтереү. *Китапсалап уҡыу.* ■ *[Яубикә:] Аңламайым, хәлфә, кинәйәңде. Бигерәк китапсалап һөйләйһең.* Б. Бикбай. / Китап ҡушҡанса итеү, китап ҡушҡанға яраҡлаштырыу. *[Ныязғол:] Йә, хәҙрәт, эш һиндә инде. Үткән эштән төш яҡшы, тигән мәҡәл булһа ла, беҙ уны үҙебеҙсәләп, һин әйткәндәй, китапсалап алып, берәй яйын табайыҡ инде.* Һ. Дәүләтшина.

**КИТАПСЫ** *и. тар.* **1.** Китапты күсереп яҙып ишәйтеүсе. *Мәғрифәт эшенә өлөш индергән был тырыш һәм баҫалҡы китапсыларҙың байтағы үҙҙәре хаҡында бер ниндәй ҙә белешмә ҡалдырмаған.* Ә. Харисов.

**2.** Ауылдан-ауылға йөрөп, халыҡҡа китап уҡыған кеше.

**КИТАПСЫЛЫҠ** *и. иҫк.* Китап баҫыусылыҡ.

**КИТАПХАНА** [*ғәр.* + фарс.] *и.* **1.** Төрлө баҫма йәки яҙма әсбаптарҙы йыя, һаҡлай һәм уҡырға биреп тора торған ойошма; библиотека. *Китапхананың ҙур бүлмәһенә оҙон өҫтәл ҡуйылған.., [уның] өҫтөндә — газета һәм журналдар.* С. Кулибай. / Айырым бер маҡсат менән бер урынға тупланған китап-журнал йыйылмаһы. *Шәхси китапхана.*

**2.** Баҫма әҫәрҙәр һаҡлай торған бүлмә йәки йорт.

**КИТАПХАНАСЫ** *и.* Китапханала эшләгән белгес. *Китапханасы каталог, картотека, альбом, плакаттар менән таныштыра, улар менән нисек эш итергә өйрәтә.* «Башҡортостан уҡытыусыһы», 1965, № 4.

**КИТЕК** *с.* **1.** Сите уйылып, кителеп сыҡҡан. *Китек ҡалаҡ. Китек сынаяҡ. Китек теш. // Сынаяҡ китеге.* ■ *Бәләкәй саҡта атаһы һуғып ебәреп, ул [Зөфәр] һике йөҙлөгөнә йығылғайны. Шунан бире уның аҫҡы ирене китек булып ҡалды.* Х. Ғиләжев.

**2.** *күсм.* Теүәллеген юғалтҡан, кәмегән, етешһеҙ. *[Бала] юҡлыҡтан тормоштоң бер сите китек кеүек булып тора.* Ф. Лоҡманов. *Өйҙә түшәк менән самауыр юҡлығы әллә ҡайҙан күҙгә бәрелеп тора. Өйҙөң бер яғы китек булып ҡалған кеүек күренә ине.* М. Ғафури.

♦ **Күңел китек булыу** ниҙер етмәгән итеп һиҙеп, кәмһенеү. *Уның бер ҡулы бәләкәй саҡтан уҡ, аттан йығылып төшөп, һынған. Шуға күрә уның күңеле китек йөрөгән саҡтары ла йыш була.* Н. Ҡәрип. *Хәҙер инде ҡыҙҙың тамаҡ та туҡ, өҫ тә бөтөн, тик күңеле генә китек, ти. Ауыл яғын һағына, ти, бахыр* (Әкиәттән).

● *Йырҙың йыртығы юҡ, көйҙөң китеге юҡ.* Мәҡәл.

**КИТЕК-ҠОТОҠ** *с.* **1.** Кителеп, ярсылып бөткән. *[Әнйебикә] китек-ҡотоҡ өҫ шәшке ултыртып, ҡалай менән моронланған сәйнүктән сәй яһай башланы.* Һ. Дәүләтшина.

**2.** Анда-һанда бүленеп, кителеп ҡалған. *Китек-ҡотоҡ сабынлыҡ. // Хәйҙәр эштең көйөнә төшөнөп, Моратша ағай менән дуҫлашып ҡына өлгөргәйне, жнейкаға тип ҡалдырылған китек-ҡотоҡ бөтөп тә тә ҡуйҙы.* Ф. Исәнғолов.

**КИТЕЛЕҮ** [1] *ҡ. төш. ҡар.* **китеү** [1] 1—4. *[Хафиз ҡарт:] Ярар, мин ҡайтайым инде, бик оҙаҡ ултырып кителде.* М. Тажи.

**КИТЕЛЕҮ** [2] *ҡ.* **1.** Ситтән киртләс булып уйылыу. *Кителеп сығыу. Кителеп төшөү. Сынаяҡ кителде.*

**2.** *күсм.* Берәй нәмәнең теүәллегенә кәмселек йәки зыян килеү. *[Әлмәт:] Беҙ яһағын да түләйбеҙ, төрлө йыйымдарын да бирәбеҙ, әммә тамағыбыҙ туҡ, бер еребеҙ кителгәне юҡ.* Б. Бикбай.

♦ **Күңел кителеү** үҙеңде рәнйетелгән итеп хис итеү; хәтер ҡалыу. *Ҡаты әйтһәң күңеле кителер.* Ш. Насыров.

● *Яҡшы ҡатын тун теkһә, йөй-йөйөнән кителер; яман ҡатын тун теkһә, бер кейелмәй һүтеләр.* Мәҡәл.

**КИТЕЛЬ** [*рус.* ⟨ *нем.*] *и.* Ултырма яғалы, бер яҡҡа ғына ҡаптырмалы форма кейеме.

**КИТЕҮ** [1] *ҡ.* **1.** Торған урынды ҡалдырыу, кем йәки нимәнеңдер янынан ситкә хәрәкәт итеү, ҡайҙалыр йүнәлеү. *Ары китеү. Кире китеү. Һыу буйлап китеү.* ■ *Шәрәфи ҡойма буйында бер аҙ ҡарап торҙо ла, шап-шап атлап Ғарифтарға табан китте.* И. Насыри. *Һинең яҡҡа ҡарҙар яуып китте, ниңә, тинем, аҡ ҡар булманым.* М. Ғәли. *Киләһең дә китәм тиһең, әллә һағынманыңмы?* (Халыҡ йырынан). / Нимәлер ярҙамында ситкә юл тотоу. *Самолёт менән китеү. Поезд менән китеү. Һыбай китеү.* ■ *Сәғиҙә берсә техникумды, берсә хушлашыу кисәһен, пароходҡа ултырып киткән минуттарын .. күҙ алдына килтерҙе.* М. Тажи. / Билдәле бер маҡсат менән берәй яҡҡа юл тотоу. *Бесәнгә китеү. Утынға китеү. Ҡунаҡҡа китеү. Фронтҡа китеү. Һунарға китеү.* ■ *Йәштәр аттарҙы һыуытыу .. өсөн, саналарға тейәлеп, урам буйына ат йөрөтөргә киттеләр.* Ғ. Дәүләтшин. *Тыуған илен һаҡлап яуға китер яҡшы ғына ата балаһы* (Халыҡ йырынан]. / Ебәргән яҡҡа йүнәлеү. *Хат китте.* ■ *Сәләмдәрем китте иҫкән ел менән* (Халыҡ йырынан). / Йылы яҡҡа йүнәлеү (ҡоштарға ҡарата). *Килер өсөн китә ҡоштар ҙа.* Н. Нәжми. *Ҡоштар китә, бик бейек тә, бик алыҫ та юлдары.* М. Ғәли. / Торған урындан ҡуҙғалыу, үҙ юлы менән йүнәлеү (транспорт нәмәләренә ҡарата). *Пароход китте. Самолет ваҡытында китте.* ■ *Пассажир поезы киткән, тик бишенсе юлда ғына .. тауар составы тора.* Б. Бикбай. / Урындан күсеп алыҫлашыу, юғалыу. *Балыҡ китте. Күс ултырмаған, киткән. Болот китте, күк йөҙө асылды.*

**2.** Йәшәгән урынды ҡалдырыу, ташлау. *Ауылдан китеү. Күсенеп китеү.* ■ *Юламанов Бакир .. эшенән сығып, Өфөнән бөтөнләйгә китте.* Н. Мусин. / Эшләгән эштән, хеҙмәт урынынан сығыу. *Уҡытыусылыҡтан китеү.* ■ *Әминә Каримовна .. уның [Мансурҙың] совхоздан китеүен, еңелерәк, көсөнә тәңгәлерәк эшкә күсеүен талап итте.* Ә. Хәкимов. / Язаға тартылып йәшәгән урынды ҡалдырыу. *Төрмәгә китеү.* ■ *Буранбай ҙа һөргөн китеү менән баҫылыр микән илдең ирҙәре* (Халыҡ йырынан). / Айырым бер исемдәр менән килеп, шул исемдән аңлашылған хәлгә күсеүҙе аңлата; сығыу. *Отставкаға китеү. Ялға китеү.* ■ *Үткән йыл Булат ағайға алтмыш йәш тулды, ул .. пенсияға китте.* Ғ. Әмири.

**3.** Тормошҡа сығыу. *Ирғә китеү. Ҡасып китеү.* ■ *Ҡыҙ бала кейәүгә китмәҫ тә, киткәс, ҡунаҡҡа ҡайтмаҫ булырмы?* З. Биишева. *Һөйгән йәрем ятҡа китә, шуға яна йөрәгем* (Халыҡ йырынан)

**4.** Кемделер ташлап, бәйләнеште өҙөү. *Ирҙән китеү.* ■ *Һин бит минән китһәң өс көн эсендә асығып үләһең. Ҡайҙа барып һыяһың һин.* Т. Хәйбуллин.

**5.** Ситкә юл алған кешелә йәки берәй нәмәлә булып, бергә юлланыу.— *Ҡулдәк алырһың, тип миңә өс тәңкә ҡалдырҙы ла, ҡалғаны кеҫәһендә китте. Эсеп бөтмәһә ярар ине,— тине Мәғфүрә.* Һ. Дәүләтшина. / Һыу ағышы менән бергә юлланыу. *Күпер киткән. Кәмә киткән.*

**6.** Нимәнеңдер эсенә буйлап үтеү, үтеп инеү (зарарлы, хәүефле нәмәләргә ҡарата). *Тын юлына китеү. Шеш мейегә киткән. Энә ҡан тамыры буйлап киткән.*

**7.** Кемдеңдер ҡарамағына күсеү, уның милкенә әйләнеү (аҡса, мал-мөлкәткә ҡарата). *Балаларға китеү. Сит кешегә китеү.* ■ *Крәҫтиәндең аҡсаһы юҡ, бөтәһе батша хөкүмәте менән дворяндарҙың тулмаҫ кеҫәһенә киткән.* Һ. Дәүләтшина.

**8.** Иреп, ағып юҡҡа сығыу (ҡар, боҙға һ. б. ҡарата). *Ер һыуығы ҡар китмәй бөтмәй.* ■ *Аҡ сәпсеккәй осоп килде лә шул, аҡтарылып, шаулап боҙ китер.* Р. Ғарипов.

**9.** Билдәле бер йүнәлештә ятыу, һуҙылыу (юл, йылға, тау кеүек нәмәләргә ҡарата). *Ҡола ат оло юлдың уңға ла, һулға ла киткән ягына боролманы, туп-тура .. китте.* С. Кулибай. *Бара ғына инем юл буйлап, юлғынайым китте ҡул менән* (Халыҡ йырынан).

**10.** Үтеү, уҙыу (ваҡытҡа бәйле төшөнсәләргә ҡарата). *Китер өсөн килә ҡоштар.* Н. Нәжми. *Ғүмер ҡыҫҡа: үтер, китер.* Б. Бикбай.

**11.** Ағыу, ағып сығыу (ҡан, йәш кеүек нәмәгә ҡарата). *Офицерҙың башынан сорлап ҡан китте.* Һ. Дәүләтшина. *Малайҙың ирендәре күбеп сыҡты, танауынан ҡан китте.* И. Ғиззәтуллин.

**12.** Ян-яҡҡа таралыу, йәйелеү (тауышҡа, еҫкә ҡарата). *Шул саҡ айғыр моңайып кешнәп ебәргән. Әллә ҡайҙарға киткән, ти, тауышы* (Әкиәттән).

**13.** Күптәргә билдәле булыу, таралыу (һүҙ, хәбәргә һ. б. ҡарата). *Сафа ҡарттың Ғабдуллаһы Сәхәп мулланың ҡыҙы менән йөрөй икән, тигән хәбәр китте.* Д. Исламов. *Мәсем хандың алыҫ китте яманаты.* «Бабсаҡ менән Күсәк».

**14.** *һөйл.* Билдәле бер хаҡҡа һатылыу. *Мал осһоҙ китте. Картуфтың күнәге бер һум илле тиндән китте.*

**15.** Сарыф ителеү, тотолоу. *Аҡса күп китте.* ■ *Айбулат .. әсәһен ерләгәндә хоҙай өсөн киткән был сығымды унан түләтерҙәр тип башына ла килтермәгәйне.* Һ. Дәүләтшина. *[Бейәләй:] Мин .. иң бәләкәсе. Мине бәйләр өсөн бик аҙ ғына йөн киткән.* С. Агиш. / Кәрәк булыу, талап ителеү (ваҡытҡа ҡарата). *Юлға өс көн китте. Ҡоҙоҡ ҡаҙыуға бер аҙна китте.* **Бушҡа китеү** файҙаһыҙға тотолоу, бушҡа исраф ителеү. *Көс бушка китте. Юҡ артынан йөрөп көн бушҡа китте.* **Әрәм(гә) китеү** *ҡар.* **бушҡа китеү.** *[Сәғиҙә:] Балаларҙың яҙыуы яҡшырҙы, матурлана төштө. Тимәк, минең эшем әрәмгә китмәгән.* М. Тажи.

**16.** Барлыҡҡа килеп, башланып, ары дауам итеү (эш-хәлгә ҡарата). *Илаш китте. Һыуыҡтар китте. Һүҙ эйәрә һүҙ китте.* ■ *Беҙҙең артта ҡарҙы ҡуйы ҡара һөрөмгә буяп [низер] ярылды. Ә унан һуң китте атыш, китте атыш ..* Ә. Чаныш. *Бер заман Батыршаға бер сапҡын башҡорт хат килтереп тапшыра. Һорашыу китә: — Кем булаһың?..* Ғ. Хөсәйенов. / Ниндәй ҙә булһа бер ыңғайға төшөп алыу. *Йәрмәт ағайҙың бәхете бала-*

*нан киткән ине. Унын бисәһе .. бала табыу менән исем алған кеше.* Д. Юлтый. / Бер ерҙән башланып, артабан һуҙылыу, дауам итеү. *Урам яғынан, өйгә тоташып, өлкән йәшел ҡапҡа китә.* Ғ. Дәүләтшин.

**17.** Эшләй башлау (механизмға ҡарата). *Мотор китте. Сәғәт китте.*

**18.** *күсм.* Вафат булыу, үлеү. *Йәшләй китте.* ■ *[Әхмәт] бәхетле тормошто тиҙерәк төҙөйөк, тип, янып-көйөп эшләп йөрөгәндә генә үпкә ауырыуынан китеп барҙы.* З. Биишева. *Ауыр түпрағың еңел булһын инде, атай! Ваҡытһыҙ киттең һин, йәшләй киттең.* В. Исхаков.

**19.** Билдәле бер исемдәр менән килеп, шул һүҙҙән аңлашылған төшөнсәнең юҡҡа сығыуын, бөтөүен аңлата. *Байлыҡ китеү. Йәм китеү. Аштың бәрәкәте китеү. Кешенең кәҙере китеү. Йорттоң ҡото китеү. Ҡулдан власть китеү. Баштан ҡайғы китеү.* ■ *Сере барҙың китә маҙаһы, маҙа китһә, килә ҡазаһы.* М. Кәрим. *[Мулла:] Йорт-ҡаралдының бәрсе китте.* Т. Хәйбуллин. *Донъяның китте беҙҙән рәхәте, йөрәгемдә ҡалды һуғыш йәрәхәте* (Бәйеттән). / Һүрелеп барып кәмеү, бөтөү. *Дуҫлыҡ китеү.* ■ *Әсә менән ул араһындағы татыулыҡтың .. китеп тороуы уға [Сабитҡа] билдәле ине.* Я. Вәлиев. / Ҡаҡшау, бөтөү. *Таҙалыҡ китеү. Көс китеү.* ■ *Йән һөйгәнең яндан китһә, китә йөрәк һаулығы* (Халыҡ йырынан).

**20.** Төбәү килештәге исемдәр менән һүҙ бәйләнеше яһап, берәй хәлгә ыңғайлауҙы аңлата. *Көн аяҙға китте. Эш ҙурға китте. Һүҙ тәрәнгә китте.* / Шул уҡ грамматик шартта берәй хәлгә күсеүҙе аңлата. *Серемгә китеү.* ■ *[Биктимер] тиҙ генә йоҡоға китһә лә, бик һаташып йоҡланы.* Б. Ишемғол. / Шул уҡ грамматик шартта күпмелер ваҡыт дауам итеүҙе аңлата. *Оҙаҡҡа китте.* ■ *Елә-саба бара күк юрға, китһен беҙҙең ғүмер күп йылға* (Халыҡ йырынан). / Шул уҡ грамматик шартта күпмелер ваҡыт үткәнен йәки нисәлер йәш тулғанын аңлата. *Бала бишкә китте. Өсөнсө айға китте инде, хәбәр юҡ.* / Шул уҡ грамматик шартта билдәле бер үлсәүҙән, кимәлдән тайпылыуҙы аңлата. *Программанан ситкә китеү.* / Шул уҡ грамматик шартта берәй нәмәгә әйләнеүҙе аңлата. *Сүпкә китеү.* ■ *[Атты] бер елдереп, әҙерәк тирләтеп алмаһаң, ашағаны тәненә һеңмәй уның, куберәк тиҙәккә китә.* Б. Бикбай. / Шул уҡ грамматик шартта тәнгә таралыуҙы аңлата. *Башҡа китте. Ҡайнар сәй аяҡтарға китте.*

**21.** *кубр. юкл.* Сығанаҡ килештәге исемдәр менән берәй нәмәнең уй-тойғола һаҡланыу-һаҡланмауын аңлатҡан һүҙ бәйләнеше яһай. *Баштан китмәй. Йөрәктән китмәй. Уйҙан китмәй. Күҙ алдынан китмәй.* ■ *Ир егеткәй ҡайҙа йөрөһә лә, үҙ илкәйе иҫтән китмәйҙер* (Халыҡ йырынан).

**22.** Ҡайһы бер рәүештәр менән килеп ҡолауҙы белдерә. *Баш аша китеү. Баш түбән китеү. Салҡан китеү.*

**23.** Икенсе бер ҡылым менән бергә ҡатмарлы мәғәнәле ҡушма ҡылым яһай. *Ҡуныл китеү. Сақырып китеү. Эшләп китеү. Күтәреп китеү. Тейәп китеү. Алып китеү. Килеп китеү. Һуғылып китеү. Теҙелеп китеү. Һуҙылып китеү. Күреп китеү. Ҡайтып китеү.*

**24.** *≠п* формаһындағы хәл ҡылымға ҡушылып ярҙамлыҡ ҡылым сифатында ҡушма ҡылым яһай: а) эш-хәрәкәттең башланыуын аңлата. *Атлап китеү. Менеп китеү. Сабып китеү.* ■ *Ҡыҙ .. бер аҙҙан аяғына баҫып йөрөп китә* (Әкиәттән); б) эш-хәрәкәттең барлыҡҡа килеүен аңлата. *Ҙурайып китеү. Йәшәреп китеү.* ■ *Һыҙылып китте тын урамда тальян гармун тауышы.* Х. Назаров; в) эш-хәрәкәттең ҡапыл булыуын аңлата. *Ҡалтырап китеү. Ҡыҙарып китеү. Терт итеп китеү.* ■ *Йәйә шартлап һынған тауышҡа тау һелкенеп киткән, ти* (Әкиәттән); г) эш-хәрәкәттең тамамланғанын аңлата. *Йоҡлап китеү. Өйрәнеп китеү. Сығып китеү. Уҙып китеү.* ■ *Бабай билендәге балтаһын алған да ташҡа һуҡҡан. Таш ярылып киткән* (Әкиәттән).

**25.** *≠а, ≠й* формаһындағы хәл ҡылымға ҡушылып, ярҙамлыҡ ҡылым сифатында ҡушма ҡылым яһай: а) ҡабатланып килгәндә, эш-хәрәкәттең дауамлы булыуын аңлата. *Һораша китте, һораша китте;* б) икенсе зат шарт ҡылым формаһында торғанда, берәй эш-хәлдең күплеге, ҙурлығына баҫым яһай. *Уларҙы яҙа китһәң, үҙе бер китап булыр.* Д. Юлтый. *Һөйләй китһәң, күп инде ул.* Ҡ. Даян.

**26.** Төп ҡылымға ярҙамлыҡ ҡылым сифатында ла/лә киҫәксәһе аша теркәлеп, икеһе лә бер үк зат, заман формаһында торғанда, эш-хәрәкәткә интенсив төҫ бирә. *Алды ла китте. Ҡайтаһың да китәһең. Сыҡҡан да киткән.* ■ *[Харисов:] Быны һөрөп ташланың да, сәстең дә ебәрҙең. Бер баҫыу була ла китә.* Т. Килмөхәмәтов.

◆ **Алға китеү** 1) яҡшыға табан барыу, үҫеү. *Малсылыҡ өлкәһендә лә һиҙелерлек алға китеш бар;* 2) тейешленән күберәк күрһәтеү (сәғәткә ҡарата). *Сәғәтем алға киткән.* **Баш китеү** *ҡар.* **баш. Бер ҡайҙа ла китмәҫ** берәй эште ашыҡтырыу мөһим түгеллеген белдереү өсөн әйтелә. *Ашау бер ҡайҙа ла китмәҫ, өлгөрөрбөҙ.* **Дан китеү** 1) яҡшы исем менән танылыу, шөһрәт алыу. *Булмаһа ла малың, китһен даның Өфө өйәҙе менән Ҡазанға* (Халыҡ йырынан); 2) насарлыҡ менән танылыу. *[Дәүләт купец — Үмәргә:] Ҡыҙыңдың илдә даны киткән, атағы сыҡҡанын белә тороп, .. үҙ самаңды ҡарарға .. кәрәк ине.* Һ. Дәүләтшина. **Донъянан** (*йәки* **теге донъяға) китеү** *шул уҡ* **донъянан кисеү** (*ҡар.* **донъя). Мөкиббән китеү** *ҡар.* **мөкиббән. Әллә ҡайҙа китеү** *юкл.* күҙгә күренерлек, иҫәпкә алынырлыҡ эш эшләү; эш ҡырыу. *Иҫкереп бөткән тракторҙар, быуындары ла ҡатып етмәгән балалар, карт-королар менән әллә ҡайҙа китеп булмай ине.* «Совет Башҡортостаны», 1966, 20 декабрь. **Әллә ҡайҙа киткән** башҡаларҙан айырылып торған; иҫ китерлек. *[Гәрәй] Хисамыйҙың егеттәрсә ҡыланыуына күҙе ҡыҙһа ла, эстән үҙен йыуатты: «Эре ҡыланып, әллә ҡайҙа киткән ере юҡ әле».* Б. Бикбай.

**КИТЕҮ** [2] *к.* Берәй нәмәнең ситен киртләс итеп уйыу. *Сынаяҡты китеү. Иренде китеү.* ■ *Хәмди еңгәм .. табамдың бер яҡ ситен китеп алып килеп бирҙе.* Ғ. Дәүләтшин.

**КИТЕШЕҮ** *к.* **1.** *урт. кар.* **китеү**. *Алып китешеү.*

**2.** Берәм-берәм китеү. *Йәштәр ситкә китешеп бөттө.*

**КИТЕШЛӘЙ** *р.* Китеп барған ыңғайҙа, юл ыңғайында. *Нугайҙар бынан китешләй бик күп мал әйҙәп киткән.* Ғ. Фәхретдинов.

**КИТИ-МИТИ: кити-мити итеү** мутлыҡ эшләү. *[Миңнегәли:] Байгильдин кити-мити итмәксе булғайны ла, ана, халыҡ ниндәй хәлгә ҡалдырҙы үҙен.* Х. Ғиләжев.

**КИТМӘ: эс китмәһе** *кар.* **эс** 1.

**КИТСЕ** *ымл.* Берәй хәбәргә ышанып етмәй, аптырап ҡалғанда әйтелә; кит. *[Дауытов:] Бына телеграмма, унда кулак Гәрәй Шаҡмановтың лагерҙан ҡасыуын хәбәр итәләр. [Тимер:] Китсе!* Б. Бикбай.

**КИТСӘЛЕ** *ымл. кар.* **китсе.**

**КИТҺӘНӘ** *ымл. кар.* **китсе.**

**КИТӘН** *и.* Тарма, кесерткән сусенән һуғылған киндер.

● *Ҡара китән буҙ булмаҫ.* Мәҡәл.

**КИТӘРЕҮ** *к.* Нимәгәлер хас сифатты кәметеү, бөтөрөү. *Киндерҙең ашын китәргәнсе йыуыу. Үҙ кәҙереңде китәреү. Аштың тәмен китәреү. Өйҙөө йәмен китәреү.* ■ *Эй эсәйек ҡымыҙҙың таҙаһын, китәрмәйек байҙың маҙаһын* (Халыҡ йырынан).

♦ **Иҫте китәреү** *кар.* **иҫ** 2. **Эс(те) кит әреү** *шул уҡ* **эскә тейеү** (*кар.* **эс** 1).

**КИФАЯ** [*ғәр.*] *с. иҫк.* Етерлек, ҡәнәғәт булырлыҡ. *Уға шул да кифая инде.*

**КИФАЯЛАНЫУ** *к. иҫк.* Ҡәнәғәт булыу; ҡәнәғәтләнеү. *Петр Великий .. Академия менән генә кифаяланмай.* М. Һаҙыев.

**КИШЕР** *и.* **1.** Сатыр сәскәләләр ғаиләһенә ҡараған баҡса үҫемлеге, йәшелсә. *Кишер орлого. Кишер ултыртыу.*

**2.** Шул йәшелсәнең ашай торған тамыры. *Аҡ кишер. Ҡыҙыл кишер. Һары кишер.*

♦ **Тиле кишер** күкшел тетмәкәй япраҡлы, ҡыҙғылт күк сәскәле үлән.

**КИШМИШ** [*фарс.*] *и.* Һөйәкһеҙ ваҡ йөҙөм сорты һәм уның кипкән емеше.

**КИШӘРЛЕК** *и. диал. кар.* **ал**[2]. *Бер-ике кишәрлек сыҡҡас, иртәнге күлемде ашайҙар.* А. Таһиров.

**КЛАВИАТУ́РА** [*рус.* ⟨ *нем.*] *и.* Ниндәй ҙә булһа бер ҡоралдағы баҫмаҡтар. *Рояль клавиатураһы.*

**КЛА́ВИШ** [*рус.* ⟨ *пол.*] *и. кар.* **баҫмаҡ**[1]. *Рояль клавишы. Яҙыу машинкаһының клавишы.*

**КЛАДОВОЙ** [*рус.* кладовая] *и. кар.* **келәт**.

**КЛАДОВЩИ́К** [*рус.*] *и.* Келәтсе.

**КЛАКСО́Н** [*рус.* ⟨ *ингл.*] *и. кар.* **ҡыҫҡыртҡыс**.

**КЛА́ПАН** [*рус.* ⟨ *нем.*] *и.* **1.** Ниндәй ҙә булһа механизмда газ, пар йәки шыйыҡлыҡ юлын яба торған ҡапҡас төрө. *Гудок клапаны.*

**2.** *шул уҡ* **йөрәк ҡапҡасы** (*кар.* **йөрәк** 1).

**КЛАРНЕ́Т** [*рус.* ⟨ *фр.*] *и.* Бер башын киң итеп ағастан яһалған, клапанлы, ҡурай һымаҡ тынлы музыка ҡоралы.

**КЛАСЛЫ** *с.* **1.** Ниндәйҙер хеҙмәткә әҙерлек дәрәжәһе юғары булған. *Беренсе класлы тракторсы. Икенсе класлы шофер.* ■ *Ул [Лебедев] төптән, ябай эшсенән күтәрелеп, үҙенең тырышлығы арҡаһында күп тәжрибә туплаған һәм беренсе класлы мастер исемен алыуға ирешкән кеше.* К. Мәргән. / Спорт төрөндә билдәле бер әҙерлек дәрәжәһе булған. *Беренсе класлы футболсы.*

**2.** Сифат яғынан ниндәйҙер кимәлдә булған. *Беренсе класлы каюта.*

♦ **Класлы вагон** *иҫк.* кеше йөрөтөү өсөн эшләнгән вагон; пассажир вагоны. *Вокзалда беҙҙе класлы вагондарҙан ғына төҙөлгән ҙур состав көтөп тора ине.* Ш. Хоҙайбирҙин.

**КЛАСС** [*рус.* ⟨ *лат.*] *и.* **1.** *лог.* Билдәле сифат һәм үҙенсәлектәре яғынан тиң нәмәләр төркөмө. / *биол.* Үҫемлек һәм хайуандар донъяһында типтан ҡала иң ҙур төркөм. *Имеҙеүселәр класы. Ылыҫлылар класы.* / *мат.* Йәнәш киғән өс кимәлдәге һандар төркөмө (мәҫ. беренсе класҡа — йөҙләр, унлыҡ, берлек һандар инә). / Төҙөлөшө һәм йыһазына ҡарап билдәләнгән самолет, карап төрө. *Беренсе класс самолет.* / Билдәле бер дәрәжәлә йыһазланған каюта йәки вагон төрө. *Өсөнсө класс каюта.*

**2.** Мәктәп курсындағы бер баҫҡыс; синыф. *Кластан класҡа күсеү.* ■ *Йәмилдең .. бишенсе класты отличноға тамамлап, ауылға ҡайтып ял иткеһе килә ине.* И. Ниғмәтуллин. *[Малай:] Зыя ағай бик күп уҡыған, белемле кеше. Ә минеке дүрт класс ҡына.* М. Тажи. / Махсус мәктәп йәки уҡыу йортоноң билдәле бер һөнәр өйрәткән бүлеге. *Ҡурай класы. Рояль класы.* / Башланғыс һәм урта мәктәптә бергә уҡыған уҡыусылар төркөмө. *Класс етәксеһе.* ■ *Дәрес башланыр алдынан бөтә кластарҙы залға сығарып теҙҙеләр.* Н. Мусин. **Класс журналы** (*йәки* **дәфтәре**) кластағы уҡыу-уҡытыу эшенең барышын теркәп бара торған кенәгә. *Уҡытыусы класс дәфтәрен ҡарап, яңы килгән балалар менән танышып сыҡты.* Б. Бикбай. / Мәктәптәге балалар уҡый торған бүлмә. *Сәғиҙә класҡа ингәндә, балалар аяҡ үрә баҫып ҡул сабып ҡаршыланылар.* М. Тажи.

**3.** Бер иш нәмәләрҙең төркөмдәрен билдәләгән сифат күрһәткесе. *Беренсе класс аҫыл таштар.* ■ *Бөтә орлоҡ сәсеү кондицияһына еткерелгән. Уның 96 проценты беренсе һәм икенсе класс талаптарына яуап бирә.* «Совет Башҡортостаны», 1986, 5 февраль. / Әҙерлек, оҫталыҡ дәрәжәһе. *«А» класының беренсе лигаһындағы .. алты команда еңеү артынан еңеү яулай.* «Совет Башҡортостаны», 1986, 30 ғинуар.

**КЛА́ССИК** [*рус.* ⟨ *лат.*] *и.* Билдәле бер өлкәлә өлгө булырлыҡ әҫәр ижад иткән күренекле яҙыусы йәки фән һәм сәнғәт эшмәкәре. *Марксизм-ленинизм классиктары.*

**КЛАССИ́К** *с.* **1.** Классикаға ингән; өлгө булырлыҡ. *Классик музыка. Классик әҫәр. Классик әҙәбиәт.* ■ *Аҡмулла шиғырҙарын күбеһенсә классик робағи формаһында яҙған.* Ә. Харисов.

**2.** Боронғо грек һәм римләндәр донъяһына мөнәсәбәтле. *Классик телдәр.* / Боронғо грек, латин телен һәм әҙәбиәтен өйрәнеүгә бәйле. *Классик филология.*

♦ **Классик бейеү** балет сәнғәтенә нигеҙ булған бейеү. **Классик көрәш** ҡул, кәүҙә көсө нигеҙендә алып барылған спорт көрәш төрө.

**КЛА́ССИКА** [*рус.*] *и. йыйн.* Классиктар ижад иткән өлгө булырлыҡ әҫәрҙәр. *Донъя әҙәбиәтенең классикаһы.* ■ *Режиссёр .. рус, сит ил классикаһын да сәхнәләштерҙе.* «Совет Башҡортостаны», 1985, 28 декабрь.

**КЛАССИФИКА́ЦИЯ** [*рус.* ⟨ *лат.*] *и.* Кластарға, төркөмдәргә бүлеү системаһы. *Фәнни классификация. Классификация үткәреү.*

**КЛАССИФИКАЦИЯЛАУ** *ҡ. ҡар.* **төркөмләү** 2.

**КЛАССИЦИ́ЗМ** [*рус.* ⟨ *нем.*] *и.* **1.** 17 быуаттан 19 быуаттың баштарына тиклем сәнғәттә, әҙәбиәттә антик классика формалары һәм образдарына эйәреү, өҫтөнлөк иткән йүнәлеш.

**2.** Боронғо грек, латин телдәрен һәм антик культураны өйрәнеүгә нигеҙләнгән уҡыу-уҡытыу системаһы.

**КЛАСТАШ** *и.* Бер үк класта уҡыған кеше.

**КЛЁВЕР** [*рус.* ⟨ *нем.*] *и.* Ҡуҙаҡлылар ғаиләһенә ингән тумалаҡ сәскәле мал ашай торған үлән; туҡранбаш. *Аҡ клевер. Ҡуян клеверы. Ҡыҙыл клевер.*

**КЛЕЁНКА** [*рус.*] *и.* Һыу үткәрмәҫлек махсус матдә яғылған туҡыма. *Ашхананың ашай торған бүлмәһе икәү. Унда шаҡмаҡлы клеёнка йәйелгән өҫтәлдәр теҙелеп ултыра.* А. Таһиров.

**КЛЕЙКОВИ́НА** [*рус.*] *и. ҡар.* **елемсә.**

**КЛЕ́ЙСТЕР** [*рус.* ⟨ *нем.*] *и.* Ондан йәки крахмалдан яһалған елем.

**КЛЁПКА** [*рус.*] *и. ҡар.* **ҡорама** [1] 2. *Хөрмәттең атаһы леспромхоздың урман участкаһында эшләй. Унда тугын саба, клепка юна.* Ж. Кейекбаев.

**КЛЕТЧА́ТКА** [*рус.*] *и.* **1.** Үҫемлек күҙәнәгенең күбөн тәшкил иткән матдә; күҙәнәклек.

**2.** Кеше һәм башҡа тереклектәрҙең организмындағы май күҙәнәктәренән торған тоташтырғыс күпшәк туҡыма.

**КЛЕТЬ** [*рус.*] *и.* Шахтаға төшөү һәм күтәрелеү өсөн эшләнгән ҡоролма. *Кук Ирәндек буйында, ҡара ерҙең ҡуйынында клеть юлдары.* Б. Вәлит.

**КЛЁШ** [*рус.* ⟨ *фр.*] *и.* Итәк һәм салбар балағының түбән яғы киң булған фасон. *Ҡыя клеш. Тулы клеш.* // *Клеш итәк. Клеш салбар.*

**КЛИЕ́НТ** [*рус.* ⟨ *лат.*] *и.* **1.** Үҙ йомошо буйынса эш йөрөтөүҙе адвокатҡа, нотариус һ. б.-ға тапшырған кеше.

**2.** Кемдер тарафынан даими хеҙмәтләндерелгән ойошма йәки айырым кеше. *[Практиканттар] әҙерләгән аш бик тәмле, клиенттарҙы хеҙмәтләндереү культураһы ла юғары.* „Совет Башҡортостаны», 1986, 28 ғинуар.

**КЛИ́ЗМА** [*рус.* ⟨ *гр.*] *и.* Тура эсәккә шыйыҡлыҡ ебәрә торған прибор. **Клизма ҡуйыу** (*йәки* **яһау**) тура эсәккә ниндәй ҙә булһа шыйыҡлыҡ ебәреү.

**КЛИ́МАКС** [*рус.* ⟨ *гр.*] *и. ҡар.* **климактерий.**

**КЛИМАКТЕ́РИЙ** [*рус.* ⟨ *гр.*] *и. мед.* Ҡатын-ҡыҙҙың ҡартлыҡҡа күсеп, енси биҙҙәре үҙгәргән осор; ырыуҙан ҡалған ваҡыт.

**КЛИ́МАТ** [*рус.* ⟨ *гр.*] *и.* Ерҙәге айырым бер урынға хас булған, шул урынды географик яҡтан билдәләгән һәм ҡабатланып торған һауа шарттары. *Диңгеҙ климаты. Йомшаҡ климат. Континенталь климат. Климат шарттары.*

**КЛИМАТЛАШТЫРЫЛЫУ** *ҡ. төш. ҡар.* **климатлаштырыу.** *Климатлаштырылған үҫемлек.*

**КЛИМАТЛАШТЫРЫУ** *ҡ.* Башҡа климатҡа, яңы тәбиғәт шарттарына күнектереү.

**КЛИМАТЛАШЫУ** *ҡ.* Башҡа төрлө климатҡа күнегеү (хайуан һәм үҫемлектәргә ҡарата).

**КЛИМАТОЛО́ГИЯ** [*рус.* ⟨ *гр.*] *и.* Климат төрҙәрен, уларҙың барлыҡҡа килеүен һәм органик донъяға булған тәьҫирен өйрәнә торған фән.

**КЛИНИК** *с.* Клиникаға мөнәсәбәтле. *Клиник шарттар.* / Клиникала башҡарылған. *Клиник тикшеренеүҙәр.*

**КЛИ́НИКА** [*рус.* ⟨ *гр.*] *и.* Ауырыуҙарҙы дауалау менән бергә ғилми эш һәм студенттар практикаһы үткәрелә торған медицина учреждениеһы. *Күҙ ауырыуҙары клиникаһы. Нервы ауырыуҙары клиникаһы.*

**КЛИШЁ** [*рус.* ⟨ *фр.*] *и. полигр.* Типографияла ҡағыҙға баҫыу өсөн металл, ағас йәки ташҡа төшөрөлгән һүрәт, һыҙма һ. б.

**КЛО́УН** [*рус.* ⟨ *ингл.*] *и.* Циркта мәрәкәләп, кәмит күрһәтеп йөрөгән артист; кәмитсе.

**КЛУБ** [*рус.* ⟨ *ингл*] *и.* Бергә ял итеү, күңел асыу, үҙешмәкәр түңәрәктәрҙә, спортта ҡатнашыу өсөн уртаҡ бер эш йәки һөнәр кешеләрен берләштергән ойошма. *Йәштәр клубы. Кино һөйөүселәр клубы.* ■ *Спорт .. клубтарына йәштәр ҙур теләк менән йөрөй.* «Совет Башҡортостаны», 1985, 16 октябрь. / Шул ойошма урынлашҡан йорт, бина. *Ауыл клубы. Завод клубы. Клуб мөдире. Клуб сәхнәһе.* ■ *Был клубта .. ҡыллы оркестр түңәрәге, драма түңәрәге эшләй, йыйылыштар үткәрелә, концерт һәм спектаклдәр ҡуйыла.* С. Кулибай.

**КЛУ́МБА** [*рус.* ⟨ *ингл.*] *и.* Матурлыҡ өсөн күберәк түңәрәкләп эшләнгән сәскә түтәле; сәскәлек. *Беҙ .. йондоҙ итеп яһалған клумбаларҙы үтеп, парктың артҡы ҡапҡаһына йүнәләбеҙ.* Ғ. Ғәйнуллин.

**КНИ́ЖКА** [*рус.*] *и.* Рәсми билдәләр ҡуйыла торған төрлө махсус документ. *Зачёт книжкаһы. Хеҙмәт книжкаһы. Һаҡлыҡ книжкаһы.*

**КНО́ПКА** [*рус.* ⟨ *гол.*] *и.* **1.** Ҡағыҙ, туҡыма йә башҡа нәмәне беркетеү өсөн ҡулланылған яҫы башлы бәләкәй генә сөй. *Өҫтәл, йәшел ҡағыҙ менән көпләнеп, кнопкалар менән ыҡсым итеп ҡаҙап ҡуйылған.* Ә. Вәли.

**2.** Электр селтәрендә йәки төрлө механизмда була торған баҫмалы төймә. *Звонок кнопкаһы. Кнопкаға баҫыу.*

**КОАЛИЦИОН** [*рус.* коалиционный] *с.* Коалиция нигеҙендә барлыҡҡа килгән, дөйөм бер маҡсат менән ойошҡан. *Коалицион хөкүмәт.*

**КОАЛИ́ЦИЯ** [*рус.* ⟨ *лат.*] *и.* Бер нисә дәүләт, политик партия һәм башҡа шуның кеүек ойошмаларҙың дөйөм бер маҡсат менән төҙөлгән берләшмәһе. *Гитлерға ҡаршы коалиция төҙөлөп, ул халыҡтарҙы һәм дәүләттәрҙе фашистик илбаҫарҙарға ҡаршы көрәшкә берләштерҙе.* «Совет Башҡортостаны», 1965, 9 май.

**КО́БАЛЬТ** [*рус.* ⟨*нем.*] *и.* **1.** Химик элемент, сағылғанда ҡыҙғылт булып күренгән, көмөш аҡ төҫтәге тимерҙән ҡаты металл. *Кобальт рудалары.* ■ *Һөт составында йод, кобальт, баҡыр һ. б. микроэлементтар бар.*

**2.** Ошо металл ҡатышҡан ҡуйы күк буяу.

**КО́БЗА** [*рус.*] *и.* Украина халҡының боронғо ҡыллы музыка ҡоралы.

**КОБЗА́РЬ** [*рус.*] *и.* Кобзала уйнап йырлаған украин халыҡ йырсыһы. *[Почтальон] миңә кобзарь иленән, яҡын дуҫтан, сәләм килтергән.* М. Сөндөклө.

**КО́БРА** [*рус.* ⟨*порт.*] *и. шул уҡ* **күҙлекле йылан** (*кар.* **йылан**[1] 1).

**КОБУРА́** [*рус.* ⟨ *төрк.*] *и.* Револьвер йәки пистолет ҡабы. *Ағас кобура.* ■ *[Михайловктың] өҫтөндә йәшел гимнастерка, зәңгәр галифе, билендә оҙонса кобуралы маузер .. ине.* Ә. Вәли.

**КОВБО́Й** [*рус.* ⟨*ингл.*] *и.* Көнбайыш Америка далаларындағы һыбай көтөүсе.

**КОВБО́ЙКА** [*рус.*] *и. һөйл.* Айырым фасон менән тегелгән шаҡмаҡлы ирҙәр күлдәге. *Апуш өҫтөнә арзанлы триконан тегелгән спорт костюмы .. һәм сатраш ковбойка кейгән.* Н. Иҙелбай.

**КОВЕРКО́Т** [*рус.* ⟨*ингл.*] *и.* Пальто, костюм һ. б. өсөн эшләнгән беше йөн йәки яртылаш йөн туҡыма. *Коверкоттан тегелгән костюм.* // *Коверкот пальто.*

**КОД** [*рус.* ⟨*фр.*] *и.* Телефон, телеграф, радио һ. б. аша хәбәр алышыу өсөн ҡулланылған йәшерен билдәләр, сигналдар системаһы. *Телеграф коды. Метеорологик код.*

**КОДЕЙН** [*рус.* ⟨ *гр.*] *и. фарм.* Йүткереүҙе баҫа торған аҡ кристалл порошок.

**КО́ДЕКС** [*рус.* ⟨ *лат.*] *и.* **1.** *юр.* Хоҡуҡтың билдәле бер өлкәһенә ҡараған, системалаштырылған закондар йыйылмаһы. *Граждандыҡ кодексы. Енәйәт кодексы. Хеҙмәт законы кодексы.*

**2.** *күсм.* Ҡараш, ҡылыҡ, ғәҙәт ҡағиҙәләренең йыйылмаһы.

**КОДЛАНЫУ** *ҡ. төш. кар.* **кодлау.** *Кодланған хәбәр.*

**КОДЛАУ** *ҡ.* Йәшерен хәбәрҙе код менән билдәләү; кодҡа һалыу. *Картаны кодлау. Приказдарҙы кодлау.*

**КОЖИМИ́Т** [*рус.*] *и.* Яһалма күндәрҙең элекке атамаһы. *Кожимит табан.*

**КОЖУ́Х** [*рус.*] *и. тех.* Төрлө ҡорамалды зыяндан һаҡлау өсөн ҡулланылған көп рәүешендәге тышлыҡ. *Пулемёт кожухындағы һыу ҡайнай башланы. Мин автоматҡа яңы магазин ҡуйҙым.* Б. Дим.

**КОЗЫРЁК** [*рус.*] *и.* Баш кейеменең маңлайҙы күләгәләп торған түңәрәк ҡаты өлөшө.

**КО́ЗЫРЬ** [*рус.*] *и.* **1.** *кар.* **уйын**[2].

**2.** *күсм.* Кәрәк саҡта бүтәндәр алдында өҫтөнлөк бирерҙәй нәмә. — *Мырҙағәли гәзитте козырь итеп файҙаланмаҡсы була. Ирекле һүҙ, ирекле йыйылыш имеш.* Б. Хәсән.

**КО́ЙКА** [*рус.* ⟨ *гол.*] *и.* **1.** Суднола беше киндерҙән аҫмалы итеп эшләнгән бер кешелек йоҡо урыны.

**2.** Ятаҡ, больницаларҙа һ. б. була торған бер кешелек карауат.

**КОК** [*рус.* ⟨ *гол.*] *и.* Караптағы аш бешереүсе.

**КО́КА** [*рус.* ⟨*исп.*] *и. бот.* Тропикта үҫкән, япраҡтарынан кокаин алына торған ҡыуаҡ.

**КОКАИ́Н** [*рус.* ⟨ *исп.*] *и.* Иҫһеҙләндергес наркотик көсө булған ағыулы матдә (кока япраҡтарынан алына).

**КОКАИНИ́ЗМ** [*рус.*] *и.* Наркоманияның бер төрө — кокаинға әүәҫләнеүҙән килгән ауырыу.

**КОКАИНИ́СТ** [*рус.*] *и.* Кокаинизм менән ауырыған кеше.

**КОКА́РДА** [*рус.* ⟨ *фр.*] *и.* Формалы баш кейеменең маңлайына ҡуя торған түңәрәк йәки оҙонса түңәрәк билдә. *[Егеттәр] ҙур түбәле, кокардалы гимназист фуражкаларын күтәрә биреп ҡуйҙылар.* А. Таһиров.

**КОКО́С** [*рус.* ⟨*исп.*] *и.* **1.** (*йәки* **кокос пальмаһы**) Эре сәтләүекле, олоно балдаҡланып торған ҙур пальма. *Кокос пальмаһы. Кокос сәтләүеге.*

**2.** Шул пальманың сәтләүеге.

**КОКС** [*рус.* ⟨*нем.*] *и.* Ташкүмер, торф кеүек нәмәләрҙе томалап үртәгәндә барлыҡҡа килә торған ҡаты яғыулыҡ. *Кокстан төрлө электродтар эшләп сығаралар.* Д. Буракаев.

**КОКСЛАНЫУ** *ҡ. тех.* Коксҡа әйләнеү.

**КОКСЛАУ** *ҡ. тех.* Коксҡа әйләндереү. *Кокслау мейесе.*

**КО́ЛБА** [*рус.* ⟨ *нем.*] *и.* Химик тәжрибә өсөн ҡулланыла торған оҙон муйынлы быяла һауыт.

**КОЛБАСА́** [*рус.*] *и.* Тапағандан һуң ас эсәккә йәки эсәк рәүешендәге көпкә тултырып, тәмтом һалып, махсус рәүештә эшкәрткән ит аҙығы. *Бешкән колбаса. Ыҫлаған колбаса. Колбаса цехы.*

**КОЛГО́ТКА** [*рус.* колготки ⟨ *чех.*] *и.* Ыштаны менән ойоғо ҡуша эшләнгән кейем, ойоҡло ыштан.

**КОЛЕНКО́Р** [*рус.* ⟨*фр.*] *и.* Ныҡ ашланған беше мамыҡ туҡыма. *Коленкор тышлы китап.*

**КОЛЕ́НЧАТЫЙ** [*рус.*]: **коленчатый вал** хәрәкәтте башҡа механизмдарға бирә торған әйләнмәле кәкре үҙәк; кәкре вал.

**КО́ЛЕР** [*рус.* ⟨ *лат.*] *и.* Тотонорлоҡ хәлгә еткереп әҙерләнгән буяу.

**КОЛЕ́Я** [*рус.*] *и.* Тимер юлдың ике параллель рельстан торған бер буйы. *Ике колеялы тимер юл.* ■ *Беренсе бөтә донъя һуғышы алдынан Белорет заводтарына тар колеялы тимер юл үткәрелә.* «Совет Башҡортостаны», 1967, 12 май.

**КОЛИ́БРИ** [*рус.* ⟨ *исп.*] *и.* Матур ҡауырһынлы бик бәләкәй ҡош (Америкала йәшәй).

**КОЛИ́Т** [*рус.* ⟨ *гр.*] *и.* Туҡ эсәк шешеүҙән булған ауырыу.

**КОЛЛЕ́ГА** [*рус.* ⟨ *лат.*] *и.* Уртаҡ эш, һөнәр менән бәйле иптәш. *Беҙ, әйтергә ярай, һинең менән коллегалар, бер өлкәлә эшләгән кешеләр.* З. Хисмәтуллин.

**КОЛЛЕГИАЛЛЕК** *и.* Бер төркөм кешеләр тарафынан башҡарылған идара, етәкселек.

**КОЛЛЕГИАЛЬ** [*рус.* коллегиальный] *с.* Күмәкләп, бергәләп башҡарыла торған. *Коллегиаль етәкселек.* ■ *Граждандыҡ һәм енәйәт эштәрен ҡарау коллегиаль рәүештә, тәүге инстанция судында халыҡ заседателдәре ҡатнашлы-*

*ғында гәмәлгә ашырыла.* Башҡорт АССР-ының Конституцияһы, 1984.

**КОЛЛЕ́ГИЯ** [*рус.* ⟨ *лат.*] *и.* **1.** Административ, башҡарма йәки кәңәшмә орган булып ойошҡан вазифалы кешеләр төркөмө. *Министрлыҡ коллегияһы.* ■ *Шәһит Хоҙайбирҙин яңы коллегия ағзаһы һәм хәрби бүлек мөдиренең урынбаҫары итеп билдәләнә.* Р. Ҡузыев.

**2.** Ҡайһы бер профессия кешеләренең бергә эшләү өсөн ойошҡан берләшмәһе. *Адвокаттар коллегияһы.*

**3.** 18 быуатта Россиялағы үҙәк хөкүмәт учреждениеларының исеме.

**КО́ЛЛЕДЖ** [*рус.* ⟨ *ингл.*] *и.* Англия, Америка һәм башҡа ҡайһы бер илдәрҙәге юғары йәки урта уҡыу йорто.

**КОЛЛЕ́Ж** [*рус.* ⟨ *фр.*] *и.* Франция, Бельгия һәм Швейцарияның айырым кантондарында урта уҡыу йорто.

**КОЛЛЕКТИ́В** [1] [*рус.* ⟨ *лат.*] *и.* Дөйөм бер эш башҡарған, маҡсаттары бер булған кешеләр төркөмө. *Студенттар коллективы. Үҙешмәкәр хор коллективы. Коммунистик хеҙмәт коллективы.* ■ *Хеҙмәт коллективтары дәүләт һәм йәмәғәт эштәрен тикшереүҙә һәм хәл итеүҙә .. ҡатнаша.* Башҡорт АССР-ының Конституцияһы, 1984.

**КОЛЛЕКТИВ** [2] [*рус.* коллективный] *с.* Күмәк кеше тарафынан башҡарылған; күмәк. *Коллектив етәкселек. Коллектив эш. Коллектив хужалыҡ. Коллектив ижад.*

**КОЛЛЕКТИВИ́ЗМ** [*рус.*] *и.* Ижтимағи тормош һәм эш принцибы итеп алған берҙәмлек. *Коллективизм рухында тәрбиәләү.*

**КОЛЛЕКТИВЛАШТЫРЫУ** *ҡ.* Ваҡ крәҫтиән хужалыҡтарын эре социалистик хужалыҡҡа берләштереү. *[Тимер] ауыл хужалығын коллективлаштырыу өлкәһендәге уңыштар тураһында ҡыҫҡаса һөйләп [сыҡты].* Б. Бикбай.

**КОЛЛЕ́КТИВЛАШЫУ** *ҡ.* Коллектив хужалыҡҡа берләшеү.

**КОЛЛЕ́КТОР** [*рус.* ⟨ *лат.*] *и.* **1.** Берәй нәмәне йыйыу һәм бүлеп таратыу эше менән шөғөлләнгән ойошма. *Китапхана коллекторы.*

**2.** Берәй нәмәнең төрлө өлгөһөн йыйып, иҫәбен алып барған кеше. *Геологик экспедиция коллекторы.*

**3.** *тех.* Даими электр генераторының үҙгәреүсән токты даими токка әйләндерә торған өлөшө.

**4.** *тех.* Газ йәки шыйыҡлыҡты төрлө торбаларҙан йыйып, ситкә ағыҙа торған киң торба. *Канализация коллекторы. Газ коллекторы.*

**5.** *тех.* Торба йәки кабель үткәреү өсөн ер аҫтынан эшләнгән юлдар.

**6.** Нефть ятҡылығы урынлашҡан тау тоҡомо. *Нефть ятҡылығы — ул нефть һеңешкән ҡаты тау тоҡомдары. Нефть тупланған был тау тоҡомдары геологтар телендә коллектор тип йөрөтөлә.* Д. Бураҡаев.

**КОЛЛЕКЦИОНЕ́Р** [*рус.*] *и.* Коллекция йыйыу менән шөғөлләнгән кеше.

**КОЛЛЕ́КЦИЯ** [*рус.* ⟨ *лат.*] *и.* Бер үк төрлө нәмәләрҙең билдәле бер тәртипкә һалынған йыйылмаһы. *Значоктар коллекцияһы. Коллекция йыйыу.* ■ *Иң оҡшағаны, әлбиттә, таштар коллекцияһы булды. Ниндәй генә таш юҡ! Аҡ, зәңгәр, ал, йәшел, сыбар, күк таштар, ынйы таш, мәрмәр таш..* К. Мәргән.

**КОЛЛО́ИД** [*рус.* ⟨ *гр*] *и. хим.* Кристалашмай торған, иҙелеп ҡуйы шыйыҡлыҡҡа әйләнгән матдә (крахмал, аҡһым, елем һ. б.).

**КОЛЛО́КВИУМ** [*рус.* ⟨ *лат.*] *и.* Студенттарҙың белемен һынау һәм арттырыу маҡсатында уҡытыусы тарафынан үткәрелә торған әңгәмә.

**КОЛО́ДКА** [*рус.*] *и.* **1.** Тәгәрмәсте туҡтатыу өсөн машина тормозына ҡуйылған тимер йәки ағас ҡыҫа. *Йылға аша сыҡҡанда .. тормоз колодкалары һыулана.* «Совет Башҡортостаны», 1970, 2 декабрь.

**2.** Орден, миҙал таҫмаһы ҡуйылған планка.

**КОЛОНИАЛИ́ЗМ** [*рус.*] *и.* Эксплуататор дәүләттәрҙәге хакимлек иткән синыфтарҙың социаль-экономик яҡтан артта ҡалған илдәрҙе политик, экономик һәм рухи йәһәттән бойондороҡҡа төшөрөүе.

**КОЛОНИАЛЬ** [*рус.* колониальный] *с.* Колония хәлендәге. *Колониаль илдәр.* / Колония биләүгә бәйле. *Колониаль политика. Колониаль режим.* ■ *Салауат тураһындағы йырҙар колониаль һәм социаль иҙелеүҙән ҡотолоу өсөн күтәрелгән ҙур көрәш дәрте менән ялҡынланған, .. оптимизм менән һуғарылған.* Ә. Харисов.

**КОЛОНИЗА́ТОР** [*рус.*] *и.* **1.** Берәй илдең халҡын буйһондороусы, иҙеүсе.

**2.** *ҡар.* **колонист** 1.

**КОЛОНИЗА́ЦИЯ** [*рус.*] *и.* **1.** Сит илде баҫып алып, көсләп колонияға әйләндереү эше.

**2.** Колонистарҙың (1мәғ.) буш ятҡан ерҙәргә күсеп ултырыуы.

**КОЛОНИЗАЦИЯЛАУ** *ҡ. ҡар.* **колониялаштырыу.**

**КОЛОНИ́СТ** [*рус.*] *и.* **1.** Буш ятҡан ергә ситтән килеп ултырған кеше.

**2.** Колонияла (3 мәғ.) торған кеше.

**КОЛО́НИЯ** [*рус.* ⟨ *лат.*] *и.* **1.** Империалистик дәүләт тарафынан баҫып алынып, иҙелгән ил. *Колонияға әйләндереү. Колония итеү.* ■ *Башҡортостан Бөйөк Октябрь революцияһына тиклем Рус империяһының иң артта ҡалған, бөтә яҡлап кәмһетелгән колонияһы булып килде.* М. Хисмәтов.

**2.** Сит ил йәки өлкәнән буш ятҡан ергә күсеп ултырған халыҡтың ауылы. *[Немец] колонияларына барып инһәң, иң тәүҙә колонияның бер осонан икенсе осона тиклем .. төп-төҙ булып һуҙылып киткән .. буяулы таҡта кәртәләр күҙгә ташлана.* Ғ. Дәүләтшин.

**3.** Берәй маҡсат менән (дауалау, тәрбиәләү һ. б. өсөн) йыйылған кешеләрҙең торлаҡ урыны. *Телһеҙҙәр колонияһы.*

**4.** *биол.* Бергә берегеп йәшәгән тереклектәр төркөмө. *Коралдар колонияһы.*

**КОЛОНИЯЛАШТЫРЫУ** *ҡ.* Колонияға әйләндереү, колония (1 мәғ.) итеү.

**КОЛОНИЯЛЫ** *с.* Колониялары (1 мәғ.) булған. *Колониялы ил.*

**КОЛО́НКА** [*рус.*] *и.* **1.** Вертикаль цилиндр рәүешендәге төрлө ҡулайлама. *Бензин колон-*

*каһы. Һыу колонкаһы. Газ колонкаһы.* ■ *Машина бензин ала торған ергә, колонка янына килеп туктаны.* С. Агиш.

**2.** *кар.* **бағана** [1] 2.

**КОЛО́ННА** [*рус.* 〈 *фр.*] *и.* **1.** Йорт архитектураһында терәк хеҙмәтен үтәгән төрлө рәүештәге бағана. *Колонналы зал.* ■ *Баҡса артында ҙур майҙан һәм был майҙанға культура һарайының бейек аҡ колоннаһы сыға ине.* Ә. Вәли. / Бағана рәүешендәге һәйкәл. *Триумфаль колонна.*

**2.** Бер-бер артлы теҙелгән хәрби кешеләр сафы. ■ *Автомобилдәр ҡуҙғалды. Улар артынан колонналар ҙа һуҙылды. Оркестр ниндәйҙер марш уйнап ебәрҙе.* И. Насыри. / Бер-бер артлы барған суднолар теҙеме. / Бер-бер артлы теҙелеп килгән халыҡ йәки машиналар төркөмө. *Демонстранттар колоннаһы. Танктар колоннаһы. Автомашиналар колоннаһы.*

**3.** *тех.* Цилиндр формаһындағы төрлө аппараттар исеме. *Һурғыс колонна* (газ эшкәртеү эшендә ҡулланыла]. *Эксплуатацион колонна* (быраулау эшендә ҡулланыла).

**КОЛОРАТУ́РА** [*рус.* 〈 *ит.*] *и. муз.* **1.** Яңғыҙ йырға көйҙө матурлау өсөн индерелгән ҡатмарлы биҙәк.

**2.** Тауыштың шул биҙәктәрҙе анһат башҡарыу һәләте.

**КОЛОРИ́Т** [*рус.* 〈 *ит.* 〈 *лат.*] *и.* **1.** Һүрәтте берләштереп торған буяу һәм төҫтәр бәйләнеше. *Сағыу колорит.*

**2.** *күсм.* Берәй нәмәнең үҙенә хас сифаттар, үҙенсәлектәр йыйылмаһы. *Милли колорит. Характерлы колорит.*

**КОЛОРИТЛЫ** *с.* **1.** Төрлө асыҡ буяуға буяулы. *Колоритлы һүрәт.*

**2.** *күсм.* Бик үҙенсәлекле, көслө. *Колоритлы әҫәр. Колоритлы шәхес.*

**КОЛХО́З** [*рус.*] *и.* Күмәк хужалыҡ; крәҫтиәндәрҙең ауыл хужалығы эштәрен бергәләшеп алып барыу өсөн социалистик нигеҙҙә берләшкән ирекле ойошмаһы. *Колхоз милке. Колхоз идараһы. Колхоз председателе. Колхоз төҙөү.*

**КОЛХОЗЛАШЫУ** *к. кар.* **коллективлашыу.** *Колхозлашыу осоро. Ауыл колхозлашты.*

**КОЛХО́З-СОВХО́З** *и. йыйн.* Колхоз һәм совхозға ҡараған хужалыҡтар. *Колхоз-совхоздарҙың күбеһе сөгөлдөр һабағын мал аҙығы итеп файҙалана.* „Совет Башкортостаны", 1965, 21 август.

**КОЛХОЗСЫ** *и.* Колхоз ағзаһы. *Колхозсыларҙың дөйөм йыйылышы.* ■ *Минең атайым колхозсы, мул игендәр үҫдыра, армияны ла, беҙҙе лә икмәк менән тәйҙыра!* Б. Бикбай.

**КОЛЧЕДА́Н** [*рус.* 〈 *фр.*] *и.* Тимер, баҡыр, никель кеүек металдарҙың көкөртлө, шулай уҡ мышаяҡ һәм һөрмә ҡатыш ҡушылдыҡтарынан торған минералдарҙың дөйөм исеме. *Баҡыр колчеданы. Көкөрт колчеданы.*

**КОЛЬЧУ́ГА** [*рус.*] *и.* Ҡорос дүңгәләк йәки тәңкәләрҙе бер-береһенә эләктереп эшләгән хәрби кейем; тимер күлдәк.

**КОЛЯ́СКА** [*рус.*] *и.* **1.** Көймәле арба.

**2.** Сабый балалар арбаһы.

**3.** Махсус маҡсат менән эшләнгән бәләкәй арба. *Инвалидтар коляскаһы. Коляскалы мотоцикл.*

**КОМА́НДА** [*рус.* 〈 *фр.*] *и.* **1.** Командир биргән ҡыҫҡа бойороҡ. *Команда биреү.* ■ *Асыҡ тәҙрәнән* «Шагом марш!» тигән команда ишетелде. Һ. Дәүләтшина.

**2.** Берәй кеше ҡул аҫтындағы хәрби часть. *Командир ҙа булған Ҡаһым түрә командаһын көнөнә биш урай* (Халыҡ йырынан).

**3.** Айырым бер маҡсат менән төҙөлгән хәрби часть. *Разведчиктар командаһы. Пулемётчиктар командаһы.* / Билдәле бер эш өсөн ойошторолған кешеләр төркөмө. *Пожарниктар командаһы.*

**4.** Судно экипажы. *Судноның командаһы тулыһынса алмашынды, тәжрибәле өлкән кадрҙар урынына йылғасылар училищеһын бөткән йәштәр килде.* „Совет Башкортостаны", 1965, 17 октябрь. / Капитан етәкселегендә берәй спорт менән шөғөлләнгән кешеләр төркөмө. *Футболсылар командаһы. Командалар ярышы.*

◆ **Команда пункты** һуғышта ғәскәр башлығы һәм уның ярҙамсылары урынлашҡан урын.

**КОМАНДАЛАУ** *к.* Командир сифатында берәй эшкә етәкселек итеү. *Парад менән командалау.*

**КОМАНДАЛЫҠ** *и.* Етәкселек. *Командалыҡ итеү.*

**КОМАНДА́РМ** [*рус.*] *и.* Армия командующийы.

**КОМАНДИ́Р** [*рус.*] *и.* Ғәскәри берәмектең, хәрби судноның башлығы. *Батальон командиры. Отряд командиры. Полк командиры. Кесе командир. Командирҙар составы. Өлкән командир.* ■ *[Вәлиев] һуғышҡа ябай яугир булып түгел, командир булып .. бара ине.* К. Мәргән. / Гражданский флотта, төҙөүселәр отрядында һ. б. звено, отряд кеүек төркөм башлығы. *Дружина командиры.*

**КОМАНДИРО́ВКА** [*рус.*] *и.* **1.** Эш-вазифа буйынса башҡарылған сәфәрле эш. *Ижади командировка. Командировка алыу. Командировка биреү.*

**2.** Шул эште үтәү өсөн сыҡҡан сәфәр. *Командировкаға барыу. Командировкала йөрөү.* ■ *Ғәләү Хашимов алыҫтағы ауыл советтарының береһенә командировкаға киткән.* Б. Бикбай.

**3.** *һөйл.* Тапшырылған эш буйынса юлға сыҡҡанлыҡты күрһәткән танытма. *Командировкаға ҡул ҡуйҙырыу.*

**КОМА́НДОВАНИЕ** [*рус.*] *и. йыйн.* Ғәскәр һәм ғәскәри берәмек башында торған кешеләр төркөмө. *Юғары командование. Полк командованиеһы.*

**КОМА́НДУЮЩИЙ** [*рус.*] *и.* Ҙур ғәскәри берләшмәнең башлығы. *Флот командующийы.*

**КОМБА́ЙН** [*рус.* 〈 *ингл.*] *и.* Бер үк ваҡытта бер нисә төрлө эш башҡара торған ҡатмарлы машина. *Ашлыҡ комбайны. Етен комбайны. Силос комбайны. Торф комбайны. Үҙе йөрөмәле комбайн. Киң алымлы комбайн.*

**КОМБА́ЙНЕР** [*рус.*] *и. кар.* **комбайнсы.**

**КОМБАЙНСЫ** *и.* Комбайн йөрөтөүсе; комбайнер. *Комбайнсылар курсы.*

**КОМБА́Т** [*рус.*] *и.* **1.** Батальон командиры.

**2.** Батарея командиры.

**КОМБЁД** [*рус.*] *и.* Ярлылар комитеты (1918 йылдың уртаһынан аҙағыиа тиклем эшләп, ауылда пролетариат диктатураһының терәге булып торған ойошма).

**КОМБИЖИ́Р** [*рус.*] *и.* Төрлө үҫемлек майына туңмай ҡатнаштырып яһаған май.

**КОМБИКО́РМ** [*рус.*] *и.* Мал туҡланыу өсөн әҙерләнгән аҙыҡ; ҡатнаш аҙыҡ.

**КОМБИНА́Т** [*рус.* ⟨*лат.*] *и.* **1.** Технологик процеста бер-береһенә бәйле булған предприятиеларҙы берләштергән йәки бер промышленность тармағына ингән төрлө предприятиены административ яҡтан берләштергән ҙур берекмә. *Металлургик комбинат. Баҡыр-көкөрт комбинаты. Ит-һөт комбинаты.* ■ *Өфө кизе-мамыҡ комбинаты эшсәндәре үҙҙәренең профессиональ байрамын ҙур уңыштар менән ҡаршыланы.* «Совет Башҡортостаны», 1986, 8 июнь. / Көнкүреш предприятиеларының йәки урындағы ваҡ предприятиеларҙың берекмәһе. *Көнкүреш комбинаты.*

**2.** Капиталистик монополияның бер формаһы — конкурентлыҡ итеүгә бәйле көрәш нигеҙендә берләшкән предприятиелар берекмәһе.

**3.** Уҡыу йорто баҫҡыстарының завод, предприятиеларҙағы берекмәһе. *Урта мәктәп янындағы ситтән тороп уҡыу базаһында уҡытыу комбинаттары төҙөлгән. Был уҡытыу комбинаттары .. ауыл хужалығы белгестәре әҙерләй.* «Башҡортостан уҡытыусыһы», 1966, № 7.

**КОМБИНА́ЦИЯ** [*рус.* ⟨*лат.*] *и.* **1.** Берәй маҡсатҡа ирешеү өсөн ҡулланылған алым. *Ҡыҙыҡлы комбинация. Комбинация эшләү.*

**2.** Ҡатын-ҡыҙҙың эстән кейә торған бәйләм күлдәге; эске күлдәк.

**КОМБИНЕЗО́Н** [*рус.* ⟨*фр.*] *и.* Курткаһы менән салбары тоташ тегелгән кейем. *Сибай урамынан бер ҡыҙ килә, йөҙө ҡуңыркөнгә көйгәнгә. Һоро комбинезон билен ҡыҫа, ҡулбашы аҡ-аҡбур тейгәнгә.* Ә. Вәли.

**КОМБРИ́Г** [*рус.*] *и.* Бригада командиры.

**КОМДИ́В** [*рус.*] *и.* Дивизия командиры.

**КОМЕ́ДИЯ** [*рус.* ⟨*гр.*] *и.* Шаян йәки сатирик йөкмәткеле драматик әҫәр. *Сатирик комедия. Комедия жанры.*

**КОМЕНДА́НТ** [*рус.* ⟨*фр.*] *и.* **1.** Хәрби ныҡытмалағы йәки бер районадағы бөтә ғәскәр башлығы. *Крепость коменданты.*

**2.** Берәй ерҙә урынлашҡан ғәскәрҙәге тәртип һәм ҡарауыл хеҙмәте өсөн яуап биргән хәрби начальник. *Гарнизон коменданты. Лагерь коменданты.*

**3.** Станция йәки портта хәрби әһәмиәте булған транспорт сараларының дөрөҫ йөрөшөн күҙәтеп торған кеше.

**4.** Берәй рәсми ойошмаға ҡараған йорттоң башлығы. *Дөйөм ятаҡ коменданты.*

◆ **Комендант сәғәте** *ҡар.* **сәғәт** [1].

**КОМЕНДАТУ́РА** [*рус.* ⟨*нем.*] *и.* Комендант (*2* мәғ.) етәкселек иткән ойошма һәм шул ойошма урынлашҡан йорт.

**КОМЕ́ТА** [*рус.* ⟨*гр.*] *и.* Ҡояш тирәһендә эллипс буйынса әйләнеп, шул юлдың Ҡояшҡа яҡын еренә килгәндә ҡойроҡлана торған яҡты тап рәүешендәге күк есеме; ҡойроҡло йондоҙ. *Комета ҡойроғо.*

**КО́МИ** *и.* Коми АССР-ының төп халҡы һәм шул халыҡтың бер кешеһе (уғыр-фин телдәренең береһендә һөйләшә). *Коми халҡы. Коми ҡатыны. Коми теле.*

**КОМИ́ЗМ** [*рус.*] *и.* Ниҙең дә булһа көлкөлө яғы; комик сифат. *С. Агиш ижадына комизм хас.*

**КО́МИК** [*рус.*] *и.* Көлкөлө ролдәр башҡарған артист.

**КОМИ́К** *с.* Ниҙе лә булһа көлкөлө итеп күрһәтеүгә ҡоролған; көлкөлө. *Комик әҫәр. Комик роль.*

**КОМИНТЕ́РН** [*рус.*] *и.* (*баш хәреф менән*) Капитализм дөйөм кризисының тәүге дәүерендә революцион эшселәр хәрәкәтенең талабы һәм бурыстарынан сығып төҙөлгән халыҡ-ара ойошма (1919—1943 йылдарҙа булған).

**КО́МИ-ПЕРМЯ́К** *и.* Комиҙарға туғандаш халыҡ һәм шул халыҡтың бер кешеһе (Коми-Пермяк автономиялы округында йәшәй). *Коми-пермяк ҡатыны.*

**КОМИСА** *р.* **1.** Коми телендә. *Комиса һөйләшеү.*

**2.** Коми халҡына хас рәүештә. *Комиса бейеү.*

**КОМИССА́Р** [*рус.* ⟨*фр.*] *и.* **1.** Хөкүмәт тарафынан айырым хоҡуҡ бирелгән вазифалы кеше.

**2.** Сит илдәрҙә һәм 18—19 быуаттарҙа Россияла: полиция хеҙмәтен үтәгән чиновник.

◆ **Халыҡ комиссары** хөкүмәт ағзаһы булып, ниндәйҙер бер халыҡ комиссариатына етәкселек итеүсе кеше. **Хәрби комиссар** 1) ғәскәри частың политик һәм хәрби әҙерлеге өсөн командир менән бер кимәлдә яуаплы итеп партия һәм хөкүмәт тарафынан ҡуйылған етәксе (1918—42 йылдарҙа); 2) хәрби комиссариатҡа етәкселек итеп, ғәскәри бурысы булған кешеләрҙе иҫәпкә тотоу, хеҙмәткә алыу кеүек эштәрҙе башҡарған кеше.

**КОМИССАРИА́Т** [*рус.*] *и.* Ҡайһы бер дәүләт һәм административ учреждениелар исеме.

◆ **Халыҡ комиссариаты** министерстволар төҙөлгәндә (1946 йылға тиклем) СССР-ҙың хужалыҡ һәм культура төҙөлөшөндәге айырым тармаҡтарына идара иткән үҙәк дәүләт органы. **Хәрби комиссариат** СССР-ҙа ғәскәри бурысы булған кешеләрҙе иҫәпкә тотоу, хеҙмәткә алыу кеүек эштәрҙе башҡара торған урындағы хәрби идара органы.

**КОМИССАРЛЫҠ** *и.* *ҡар.* **комиссариат.** *«Белем» журналы 1925 йылдың 1 гинуарынан башлап Башҡортостан Мәғариф халыҡ комиссарлығы тарафынан сығарыла башланы.* Т. Йәнәби.

**КОМИССИОН** [*рус.* комиссионный] *с.* Сауҙа өлкәһендәге аралашлыҡ эшенә бәйле. *Комиссион договор. Комиссион хаҡ.* / Аралашлыҡ эшен башҡарған. *Комиссион магазин.* / Комиссия аша һатырға бирелгән. *Комиссион тауар.*

**КОМИ́ССИЯ** [1] [*рус.* ⟨*лат.*] *и.* Махсус магазиндың шәхси кешегә нимәһендер һатышып биргән ярҙамы; аралашлыҡ. *Комиссияға тапшырыу. Комиссия аша һатыу.*

**КОМИ́ССИЯ** [2] [*рус.* ⟨*фр.*] *и.* Айырым рәсми

хоҡуҡ менән билдәле бер вазифа башҡарған кешеләр төркөмө йәки бер нисә кешенән торған орган. *Ревизия комиссияһы. Һайлау комиссияһы. Планлаштырыу комиссияһы.* ■ *Закондар сығарыу комиссияһы 1767 йылдың 30 июлендә Мәскәүҙә .. асылды.* Ғ. Хөсәйенов.

**КОМИТЕ́Т** [*рус.* ⟨*фр.*] *и.* **1.** Берәй эшкә етәкселек итеү өсөн һайлап ҡуйылған орган. *Профсоюз комитеты.*

**2.** Билдәле бер вазифа башҡарыу өсөн ойошторолған идара органы. *Фән һәм техника дәүләт комитеты.*

**КОМИТЕТСЫ** *и. һөйл.* Комитет ағзаһы.

**КОММЕНТА́РИЙ** [*рус.* ⟨*лат.*] *и.* **1.** Берәй яҙмаға бирелгән аңлатма. *Комментарий яҙыу. Ҡулъяҙма комментарийҙар менән эшләнгән.*

**2.** Ниҙе лә булһа асыҡлау, төшөндөрөү өсөн бирелгән аңлатма. *Комментарий биреү. Халыҡ-ара хәлгә бирелгән комментарий.*

**КОММЕНТА́ТОР** [*рус.*] *и.* Комментарий биреүсе, аңлатма биреүсе. *Радио һәм телевидение комментаторы.*

**КОММЕРСА́НТ** [*рус.*] *и.* Сауҙа иткән, коммерция менән шөғөлләнгән кеше; сауҙагәр. *[Ғүмәр — Салихҡа:] Ул бит красный коммерсант, уға һатыу эшенең бөтә нәмәһен белергә кәрәк.* С. Агиш.

**КОММЕ́РЦИЯ** [*рус.* ⟨*лат.*] *и.* Сауҙа эше, сауҙа. **Коммерция директоры** предприятиела директорҙың тәьмин итеү, сауҙа, хужалыҡ һәм аҡсаға бәйле эштәрҙе алып барыусы урынбаҫары.

♦ **Коммерция тиҙлеге** транспортты файҙаланыу күрһәткесе, хәрәкәттең уртаса тиҙлеге. *Быраулауҙың коммерция тиҙлеген арттырыу өсөн көрәш һуғыш йылдарында ла һүрелмәне.* «Ағиҙел». 1985, № 7. **Коммерция суды** революцияға тиклемге Россияла: сауҙа һәм векселдарға бәйле эштәрҙе ҡараған суд. **Коммерция училищеһы (мәктәбе)** революцияға тиклемге Россияла: сауҙа эшендә эшләүселәрҙе әҙерләй торған урта уҡыу йорто. **Коммерция флоты** сауҙа эше менән шөғөлләнгән, хәрби булмаған флот.

**КОММУН** [*рус.* коммунист] *и. һөйл.* **1.** Коммуна (1 мәғ.) ағзаһы.

**2.** Коммунист.

**КОММУ́НА** [*рус.* ⟨*фр.*] *и.* **1.** Хеҙмәт һәм мөлкәт уртаҡлығы нигеҙендә берләшкән коллектив. *Хеҙмәт коммунаһы. Коммуна төҙөү.*

**2.** Франция, Италия һ.б. бер нисә илдә: түбәнге административ территориаль берәмек.

♦ **Ауыл хужалығы коммунаһы** совет власыньң тәүге йылдарында барлыҡҡа килгән ауыл хужалығы кооперацияһының бер формаһы. **Париж коммунаһы** беренсе пролетар революция һәм эшселәр синыфының беренсе хөкүмәте (1871 йылдың 18 мартынан 28 майына тиклем була).

**КОММУНАЛЬ** [*рус.* коммунальный] *с.* Ҡалалағы дөйөм хужалыҡҡа мөнәсәбәте, бәйләнеше булған, шул хужалыҡҡа ҡараған. *Коммуналь банк. Коммуналь хужалыҡ.*

♦ **Коммуналь квартира (*йәки* йорт)** ҡала хужалығы ҡарамағында булып, бер нисә ғаилә тарафынан биләнгән квартира йәки йорт. *[Варвара:] Коммуналь өй үҙебеҙ йәшәгән илдең бер өлөшө лә баһа. Уртаҡ өйҙө аямаған кеше уртаҡ хеҙмәтте лә аямай.* Б. Бикбай.

**КОММУНА́Р** [*рус.* ⟨*фр.*] *и.* **1.** 1871 йыл Францияла булған беренсе пролетар революцияла ҡатнашҡан кеше.

**2.** Коммуна (1 мәғ.) ағзаһы.

**КОММУНИ́ЗМ** [*рус.* ⟨*лат.*] *и.* **1.** Үҫеш законы буйынса капитализмға алмашҡа килеп, етештереү сараларының иҗтимағилаштырылыуына, синфи эксплуатация һәм милли иҙгенлектән азат булған эшсәндәрҙең хеҙмәттәшлеге һәм үҙ-ара ярҙамына нигеҙләнгән иҗтимағи-экономик формация.

**2.** Коммунистик формацияның юғарғы фазаһы: «һәр кемдән һәләтенсә, һәр кемгә ихтыяжынса» тигән принципҡа ҡоролған синыфһыҙ йәмғиәт.

**3.** Пролетар революцияның һәм коммунистик йәмғиәт төҙөү эшенең, объектив үҫеш закондарын өйрәнеүгә нигеҙләнеп, Маркс, Энгельс, Ленин тарафынан эшләнгән ғилми теорияһы һәм тактикаһы.

♦ **Тәүтормош коммунизмы** синыфтар барлыҡҡа килгәнгә тиклемге тәүтормош ырыу общинаһының уртаҡ милекселек менән билдәләнгән йәмғиәт ҡоролошо. **Фәнни коммунизм** коммунистик иҗтимағи-экономик формацияның барлыҡҡа килеү, үҫеү һәм йәшәү закондары тураһындағы фән (марксизм-ленинизм тәғлимәтенең бер өлөшөн тәшкил итә). **Хәрби коммунизм** совет власының граждандар һуғышы һәм интервенция осорондағы экономик политикаһы (1918—1920 йылдарҙы эсенә ала).

**КОММУНИКАТИВ** [*рус.* коммуникативный] *с. лингв.* Аралашыуға хеҙмәт иткән, аралашыуға мөнәсәбәтле. *Телдең коммуникатив функцияһы.*

**КОММУНИКАЦИОН** [*рус.* коммуникационный] *с.* Ике араны тоташтырыу, бәйләү өсөн хеҙмәт иткән. *Коммуникацион линия.*

**КОММУНИКА́ЦИЯ** [*рус.* ⟨*лат.*] *и.* **1.** *махс.* Аралашыу юлдары, ике аралағы бәйләнеш. *[Комкор — Шайморатовка:] Бурыс шул: ярҙам килеп еткәнгә кәҙәр, дошмандың коммуникацияһын ҡулда ныҡ тоторға.* Ә. Ихсан.

**2.** Эш барышында кешеләрҙең үҙ-ара аралашыуы, хәбәрләшеүе.

**КОММУНИ́СТ** [*рус.*] *и.* Коммунизм идеяһы нигеҙендә эш иткән партия ағзаһы. *Коммунистар партияһы.* ■ *Тарихи пландарҙы бойомға ашырыу өсөн көрәштең алғы һыҙығында .. коммунистар барырға тейеш.* «Совет Башҡортостаны», 1986, 23 ғинуар.

**КОММУНИСТИК** *с.* **1.** Коммунизмға бәйле, коммунизмға ҡараған. *Коммунистик формация.*

**2.** Коммунизм принцибына нигеҙләнгән. *Коммунистик йәмғиәт.*

**3.** Коммунизм идеяһына таянып эш иткән, коммунизм идеяһы менән һуғарылған. *Коммунистик ҡараш.*

♦ **Коммунистик интернационал** *кар.* **коминтерн.**

**КОММУТА́ТОР** [*рус.* ⟨ *лат.*] *и.* **1.** Электр юлын тоташтыра, өҙә йәки электр йүнәлешен үҙгәртә торған ҡулайлама.

**2.** Телефон элемтәһен ҡул менән тоташтырғанда ҡулланылған ҡулайлама. *Телефон коммутаторы. Диспетчер коммутаторы.*

**КОММУТА́ЦИЯ** [*рус.* ⟨ *лат.*] *и.* **1.** Махсус аппаратура ярҙамында электр йүнәлешенең үҙгәртелеше.

**2.** Телефон, телеграф һәм радио станцияларындағы электр сымдарын, ҡорамалдарын тоташтырыу системаһы.

**КОММЮНИКЕ́** [*рус.* ⟨ *фр.*] *и.* Хөкүмәттең халыҡ-ара әһәмиәте булған мәсьәләләр тураһындағы рәсми белдереүе.

**КОМО́Д** [*рус.* ⟨ *фр.*] *и.* Гел тартманан торған тәпәшәк шкаф (кейем-һалым һәм башҡа ваҡ-төйәк өсөн). *Комод тартмаһы.* ■ *Ғәлиәкбәрҙең ҡатыны комод өҫтөндәге түңәрәк көҙгө алдында баҫып тора ине.* З. Биишева.

**КОМПА́НИЯ** [*рус.* ⟨ *фр.*] *и.* **1.** Бергә булған, бергә йөрөгән кешеләр төркөмө. *Күңелле компания.* ■ *Йәштәр барыһы ла шат. Йырлайҙар, гармун уйнайҙар. Ҡыҙҙар тураһында һөйләйҙәр. Башта .. ситтәрәк торһам да, һуңынан мине лә шул компанияға алдылар.* Ғ. Хәйри.

**2.** Эш хужаһы булған капиталистарҙың сауҙа йәки промышленность берекмәһе. *Нефть компаниялары. Алтын эҙләү буйынса төҙөлгән компания.*

**КОМПАНЬО́Н** [*рус.* ⟨ *фр.*] *и.* **1.** Компанияла бергә булған кеше; иптәш. *Макаров .. компаньондарының ҡыҫҡырышыуына ҡарамай, кәрттәрен ырғытып, Хаят артынан төшөп китте.* Һ. Дәүләтшина.

**2.** Сауҙа йәки промышленность берекмәһенең ағзаһы. *Касьянов приисканы һатыу-һатмау хаҡында компаньондары менән кәңәшләшергә вәғәҙә итте.* Я. Хамматов. *[Осокин:] Исмаил Тасимович, компаньон булырға тигән ҡарашыңды хуп күрәм: әйҙә беҙ завод, рудниктарҙы ғына түгел, бөтә ер-һыуҙарҙы бергә берләштерәйек.* Ғ. Хөсәйенов.

**КОМПА́РТИЯ** [*рус.*] *и.* Коммунистар партияһы.

**КО́МПАС** [*рус.* ⟨ *ит.*] *и.* Һәр ваҡыт төньяҡҡа күрһәтеп торған магнитлы теле булып, донъя тарафтарын билдәләү өсөн ҡулланылған прибор. *Компас теле. Компасҡа ҡарап барыу.*

**КОМПЕНСА́ТОР** [*рус.* ⟨ *лат.*] *и.* Машина һәм механизмдарҙың нормаль эше өсөн кәрәгенән артыҡ йә кәм булған көс, йылылыҡ, яҡтылыҡ, тиҙлек кеүек нәмәләрҙе тигеҙләп, тейешле кимәлгә килтереп тороу хеҙмәтен үтәгән төрлө приборҙар атамаһы. *Оптик компенсатор. Синхронлы компенсатор.*

**КОМПЕНСА́ЦИЯ** [*рус.* ⟨ *лат.*] *и.* **1.** Тотолған әйбер, күрелгән зыян, өҫтәмә эш йәки башҡа шуның кеүек нәмәне ҡаплар өсөн түләнгән хаҡ. *Компенсация алыу. Компенсация түләү.*

**2.** *мед.* Ауырыуҙан килгән үҙгәрешкә организмдың яраҡлашыуы.

**3.** *тех.* Механизмдың эшенә зыян итерлек сит шарттарҙың тигеҙләнеше.

**КОМПЕТЕНТЛЫ** *с.* **1.** Айырым бер өлкәлә тейешле белеме булған, яҡшы белемле. *Компетентлы врач. Компетентлы булыу.* ■ *Иң компетентлы һәм белемле белгестәрҙе, проблеманы хәл итеүгә ылыҡтырыу .. уны уңышлы үтәүгә гарантия бирә.* «Совет Башҡортостаны», 1986, 28 июнь.

**2.** Вазифаһы буйынса берәй эште, мәсьәләне хәл итеүгә хоҡуҡлы. *Компетентлы ойошма.*

**КОМПЕТЕНТҺЫҘ** *с.* **1.** Ниндәйҙер эште, мәсьәләне хәл итеүгә белеме етмәгән йәки белеме тейешле кимәлдә тип табылмаған. *Компетентһыҙ булыу.*

**2.** Вазифаһы буйынса берәй эште, мәсьәләне хәл итерлек хоҡуғы булмаған.

**КОМПЕТЕ́НЦИЯ** [*рус.* ⟨ *лат.*] *и.* **1.** Кемгәлер яҡшы таныш булған эш йәки фән өлкәһе.

**2.** Айырым ойошма йәки кешенең вазифаһында, ҡарамағында булған эш һәм мәсьәлә. *Халыҡ депутаттарының урындағы Советтарының башҡарма комитеттары үҙ компетенцияһы сиктәрендә ҡарарҙар ҡабул итә.* Башҡорт АССР-ының Конституцияһы, 1984.

**КОМПИЛЯ́ЦИЯ** [*рус.* ⟨ *лат.*] *и.* **1.** Хеҙмәттең үҙ аллы тикшеренеүҙәр нигеҙендә түгел, бүтән кешенән алынған мәғлүмәт һәм фекерҙәр нигеҙендә яҙылышы. *Компиляция яһау.*

**2.** Шул юл менән яҙылған хеҙмәт. *Ҙур ентеклелек менән башҡарылғанда, фәнни белемдәрҙе популярлаштырыуҙа компиляция әһәмиәт ҡаҙанырға ла мөмкин.* К. Әхмәтйәнов.

**КО́МПЛЕКС** [*рус.* ⟨ *лат.*] *и.* Үҙ-ара бәйләнеше булған төрлө нәмә, күренеш һәм үҙенсәлектәр йыйылмаһы. *Ашламалар комплексы. Гимнастик күнекмәләр комплексы. Ҡаланың архитектура комплексы.* ■ *Беҙ тәҡдим иткән яңы тышҡы политик инициативалар комплексы шуға иҫәпләнгән: кешелек донъяһы 2000 йылды тыныс күк аҫтында ҡаршылаһын.* «Совет Башҡортостаны», 1986, 16 ғинуар.

**КОМПЛЕКСЛЫ** *с.* Үҙ-ара бәйләнеше булған төрлө күренеш, нәмә һәм үҙенсәлектәрҙе эсенә алған. *Комплекслы экспедиция. Хеҙмәт күрһәтеү сфераһын үҫтереүҙең комплекслы программаһы. Эште комплекслы итеп алып барыу.* ■ *Тәбиғи һәм материаль ресурстарҙы комплекслы файҙаланырға, .. юғалтыуҙарҙы һәм файҙаһыҙ сығымдарҙы бөтөрөргә кәрәк.* «Совет Башҡортостаны», 1985, 11 ноябрь.

♦ **Комплекслы бригада** төрлө һөнәр кешеләренән торған эш бригадаһы.

**КОМПЛЕ́КТ** [*рус.* ⟨ *лат.*] *и.* **1.** Берлектә бер бөтөн тәшкил иткән нәмәләрҙең тулы йыйымы. *Запас частар комплекты. Кейем комплекты.*

**2.** Талап ителгән йәки штат буйынса ҡаралған кешеләр һаны. *Уҡыусылар комплекты.*

**КОМПЛЕКТЛАНЫУ** *к. төш. кар.* **комплектлау.** *Уҡытыусылар менән комплектланған мәктәп.* ■ *Коллективтың составы ла ҡуйылған бурысҡа ҡарап комплектлана.* «Совет Башҡортостаны», 1986, 28 июнь.

**КОМПЛЕКТЛАУ** *к.* **1.** Комплектҡа килтереп йыйыу. *Журнал комплектлау.*

**2.** Комплект буйынса тейеш булған һанға тултырыу. *Кадрҙар менән комплектлау. Кластарҙы комплектлау.*

**КОМПЛЕКТЛЫ** *с.* Комплектка килтерелгән. *Комплектлы мәктәп.*

**КОМПЛЕ́КЦИЯ** [*рус.* ⟨*лат.*] *и. кит.* Тән төҙөлөшө, буй-һын.

**КОМПЛИМЕ́НТ** [*рус.* ⟨*фр.*] *и.* Кешегә әйтелгән маҡтау һүҙе. *Комплимент әйтеү.* ■ *[Кәбир:] Күҙҙәрең матур һинең, Сажиҙә. [Сажиҙә:] Комплиментың өсөн рәхмәт инде.* Б. Дим.

**КОМПОЗИ́ТОР** [*рус.* ⟨*лат.*] *и.* Музыкаль әҫәр ижад иткән кеше. *Ҡурай менән башлаған башҡорт егете .. композитор булып үҫте.* Н. Иҙелбай.

**КОМПОЗИЦИОН** [*рус.* композиционный] *с.* Композицияға бәйләнешле, мөнәсәбәте булған. *Әҫәрҙең композицион яғы.*

**КОМПОЗИ́ЦИЯ** [*рус.* ⟨*лат.*] *и.* **1.** Әҙәбиәт һәм сәнғәт әҫәрҙәренең төҙөлөшө, эске ҡоролошо. *Романдың композицияһы.* ■ *Яҙыласаҡ портреттың композицияһы тураһында Ғилманов та, Рауил да күп уйланы.* С. Агиш.

**2.** Берҙәм, төҙөк бер тәртипкә килтерелгән музыкаль әҫәр, һүрәт һ. б. *Күп фигуралы композиция. Ике композициянан торған музыкаль әҫәр.* / Тема һәм йөкмәтке яғынан бәйләнгән әҙәби һәм музыкаль әҫәрҙәр ҡушылмаһы. *Әҙәби-музыкаль композиция. Хореографик композиция.*

**3.** *муз.* Музыкаль әҫәрҙәр яҙыу теорияһы. *Композиция класы.* / Музыкаль әҫәрҙәр яҙыу эше. *Композиция менән шөғөлләнеү.*

**КОМПОНЕ́НТ** [*рус.* ⟨*лат.*] *и. кит.* Ҡатмарлы йәки ҡатнаш нәмәнең эсенә ингән бер өлөш. *Ыҫмала — яһалма күн эшләгәндә мөһим компонент. Уның таҙа, ҡоро булыуына продукцияның сифаты бәйләнгән.* «Совет Башҡортостаны», 1986, 19 февраль.

**КОМПО́СТ** [*рус.* ⟨*ингл.*] *и. а. х.* Серетмәгә тупраҡ ҡатыштырып яһаған органик ашлама.

**КОМПО́СТЕР** [*рус.* ⟨*фр.*] *и.* Тимер юл, трамвай һ. б. транспорт билеттарына контроль билдәһе һала торған аппарат.

**КОМПОСТЕРЛАНЫУ** *ҡ. төш. ҡар.* **компостерлау.** *Компостерланған билет.*

**КОМПОСТЕРЛАУ** *ҡ.* Компостер менән билдә һалыу, тишеү. *Билетты компостерлау.* / Берәй самолет, поезд йәки пароходтан икенсеһенә күскәндә, ваҡытлыса станцияла туҡталғанда билетты регистрациялау.

**КОМПО́Т** [*рус.* ⟨*фр.*] *и.* Төрлө емеште шәкәрле һыуҙа ҡайнатып әҙерләгән эсемлек. *Алма компоты.* / Шул эсемлек өсөн әҙерләнгән кипкән емештәр ҡатышмаһы.

**КОМПРЕ́СС** [*рус.* ⟨*фр.*] *и.* Ауыртҡан ергә һалынған һыулы йәки дауалы йылы сепрәк; боҫлама. *Ҡоро компресс. Уксус компресы. Компресс ҡуйыу.*

**КОМПРЕ́ССИЯ** [*рус.* ⟨*лат.*] *и. тех.* Двигатель цилиндрындағы баҫым менән һауа, газ һәм ҡатнаш яғыулыҡтың ҡыҫылыуы.

**КОМПРЕ́ССОР** [*рус.* ⟨*лат.*] *и.* Һауа һәм газды билдәле бер баҫымға тиклем ҡыҫа торған машина. *Поршенлы компрессор.*

**КОМПРЕССОРЛЫ** *с.* Компрессорҙарҙан торған. *Компрессорлы ҡоролмалар.*

**КОМПРОМИ́СС** [*рус.* ⟨*лат.*] *и.* Бер-береңә юл ҡуйыу нигеҙендә ирешелгән килешеү.

**КОМПЬЮ́ТЕР** [*рус.* ⟨*ингл.*] *и.* Электронлы иҫәпләү машинаһының бер атамаһы. *Уҡыу процесына компьютер техникаһы индерелә башланы.* «Совет Башҡортостаны», 1986, 29 ғинуар.

**КОМПЬЮТЕРЛАШТЫРЫУ** *ҡ.* Компьютерҙар ҡуйыу, компьютерҙар менән тәьмин итеү. *Производствоны компьютерлаштырыу торған һайын киңерәк масштабтарҙа алып барыласаҡ.* «Совет Башҡортостаны», 1985, 11 ноябрь.

**КОМСОМО́Л** [*рус.*] *и.* **1.** Коммунистик йәштәр союзы (1991 йылға тиклем). *Ленин комсомолы. Комсомол район комитеты. Комсомол секретары (һөйл.). Комсомолға инеү.* ■ *Ғорурлан, Ватан, алда бара гел комсомол — ҡыҙ һәм улдарың!* Ғ. Әмири.

**2.** Коммунистик йәштәр союзының ағзаһы. *Ул саҡта мин комсомол .. булмаһам да, комсомолдар менән бергә йөрөй торғайным.* Ғ. Хәйри.

**КОМСОМО́ЛЕЦ** [*рус.*] *и. ҡар.* **комсомол** *2.*

**КОМСОМО́ЛИЯ** [*рус.*] *и. һөйл. йыйн.* Комсомолдар.

**КОМСО́РГ** [*рус.*] *и.* Тәүге комсомол ойошмаһының етәксеһе.

**КОМСОСТА́В** [*рус.*] *и.* Ғәскәрҙәге бөтә булған командирҙар. *Полктың комсоставы.*

**КОМФО́РТ** [*рус.* ⟨*ингл.*] *и.* Көнкүрештәге бөтә булған уңайлыҡ, яҡшы шарт. *Комфортта йәшәү.*

**КОМФОРТАБЕЛЛЕ** *с.* Бөтә яҡлап уңайлы; комфортлы. *Комфортабелле вагон.*

**КОМФОРТЛЫ** *с.* Бөтә уңайлыҡтар менән тәьмин итеүле; комфортабелле. *Комфортлы квартира.*

**КОН** [*рус.*] *и.* **1.** Отош уйынында: уйын аҡсаһын ҡуйған урын. *Конға ҡуйыу.* ■ *Ҡотлояр, кәртте өләшеп, .. күҙҙәрен ялтыратты ла: «Конда ун дүрт һум, малайҙар»,— тине.* Һ. Дәүләтшина.

**2.** Бер тапҡыр уйналған уйын; партия. *Бер кон уйнау.*

**КОНВЕ́ЙЕР** [*рус.* ⟨*ингл.*] *и.* Төрлө нәмәне эшсенән эшсегә йәки урындан урынға шылдырып тороу өсөн ҡулланылған ҡулайлама. *Таҫмалы конвейер. Һоҫҡоло конвейер. Конвейер менән эшләү.*

◆ **Йәшел конвейер** малдарҙы яҙҙан алып көҙгә тиклем йәшел аҙыҡ менән тәьмин итеү системаһы. *Ферма эргәһендә йәшел конвейер өсөн төрлө культура сәселгән. Унда арыш та, һоло менән борсаҡ ҡатнашмаһы ла, сөгөлдөр ҙә бар.* «Совет Башҡортостаны», 1965, 13 июнь.

**КОНВЕЙЕРЛЫ** *с.* Конвейер менән эшләгән, конвейерға ҡороулы. *Конвейерлы система.*

**КОНВЕ́НТ** [*рус.* ⟨*лат.*] *и.* Ҡайһы бер илдәрҙә үҙенә башҡа бер хоҡуҡ менән һайлана торған закон сығарыу ойошмаһы.

◆ **Милли конвент** Францияла 18 быуат аҙағындағы буржуаз революция осоронда барлыҡ-ҡа килгән иң юғарғы һайланма орган.

**КОНВЕ́НЦИЯ** [*рус.* ⟨*лат.*] *и.* Айырым бер мәсьәлә буйынса төҙөлгән халыҡ-ара килешеү. *Тимер юл конвенцияһы. Конвенция төҙөү.*

**КОНВЕРГЕ́НЦИЯ** [*рус.* ⟨ *лат.*] *и.* **1.** *махс.* Бер-береһенә бәйләнеше булмаған төрлө күренештәрҙәге айырым сифаттарҙың үҙ-ара оҡшашлығы.

**2.** *биол.* Үҙ-ара ҡәрҙәш булмаған төрҙәр араһында бер үк шарттарҙа йәшәү, уларға яраҡлашыу нигеҙендә барлыҡҡа килгән оҡшашлыҡ.

**КОНВЕ́РСИЯ** [*рус.* ⟨ *лат.*] *и. фин.* Дәүләт заемының тәүге шарттарына һуңынан индерелгән үҙгәреш (хаҡын кәметеү, түләү срогын оҙайтыу һ. б.)

**КОНВЕ́РТ** [*рус.* ⟨ *фр.*] *и.* **1.** Ебәреләсәк хат, ҡағыҙ, документ кеүек нәмәләрҙе һалыу өсөн дүртмөйөшләп ҡағыҙҙан эшләнгән пакет. *Алһыу хатты дүрткә бөкләп конвертҡа һалды.* С. Агиш.

**2.** Имсәк балаларҙы төрә торған тоҡ һымаҡ юрған.

**КОНВЕРТЛАУ** *ҡ.* Конвертҡа һалыу. *Хатты конвертлау.*

**КОНВОЙР** [*рус.*] *и.* **1.** Кем йәки нимәнелер һаҡлап, ҡарауыллап барған кеше.

**2.** Караптарҙы оҙатып барған һаҡсы карап йәки самолет.

**КОНВО́Й** [*рус.* ⟨ *гол.*] *и.* **1.** Кем йәки нимәнелер юлда ҡарауыллап барыу, һаҡлау өсөн билдәләнгән ҡоралы төркөм. *Конвойҙа хеҙмәт итеү. Конвой менән йөрөү.*

**2.** Караптарҙы һөжүмдән һаҡлап алып барған карап йәки самолеттар төркөмө.

**3.** *һөйл. ҡар.* **конвоир** 1. *[Григорийҙы] конвоир Самар вокзалынан алып кит[те].* Һ. Дәүләтшина.

**КОНГЛОМЕРА́Т** [*рус.* ⟨ *лат.*] *и.* **1.** *кит.* Төрлө осраҡлы нәмәнең ҡатнашмаһы. *Фирмалар конгломераты. Халыҡтар конгломераты.*

**2.** *геол.* Төрлө таш, ҡырсын, балсыҡ ҡатышып ҡатҡан тау тоҡомо.

**КОНГРЕ́СС** [*рус.* ⟨ *лат.*] *и.* **1.** Ҙур күләмдә үткәрелгән, күп ваҡыт халыҡ-ара әһәмиәткә эйә булған йыйылыш. *Бөтә донъя профсоюздар конгресы. Тыныслыҡ яҡлаусылар конгресы.*

**2.** АҠШ һәм күпселек Латин Америкаһы илдәрендәге закон сығарыу органы.

**КОНГРЕССМЕ́Н** [*рус.* ⟨ *ингл.*] *и.* Конгресс (2 мәғ.) ағзаһы.

**КОНДЕНСА́ТОР** [*рус.* ⟨ *лат.*] *и.* **1.** Үҙендә электр көсө туплай торған ҡорамал. *Конденсатор батареялары.*

**2.** Парҙы һыуға әйләндерә торған аппарат.

**КОНДЕНСАЦИЯЛАУ** *ҡ. ҡар.* **конденсирлау.**

**КОНДЕНСИРЛАНЫУ** *ҡ. төш. ҡар.* **конденсирлау.** *1963 йылда .. конденсирланған массанан фенолды ҡыуыу процесында бер яңылыҡ индерелгәйне.* «Совет Башҡортостаны», 1971, 30 май.

**КОНДЕНСИРЛАУ** *ҡ.* **1.** Йыйыу, туплау. *Электр энергияһын конденсирлау.*

**2.** Пар, газдарҙы ҡыҫыу йәки һыуытыу юлы менән шыйыҡ, йә булмаһа ҡаты хәлгә килтереү. *Парҙы конденсирлау.*

**КОНДИ́ТЕР** [1] [*рус.* кондитерский] *и.* Төрлө тәм-том, тәмле-томло ашамлыҡ. *Кондитер фабрикаһы. Кондитер магазины.*

**КОНДИ́ТЕР** [2] [*рус.* ⟨ *лат.*] *и.* Төрлө тәм-том бешереү оҫтаһы.

**КОНДИЦИОНЕ́Р** [*рус.*] *и.* Бүлмәнең һауаһын яҡшырта торған прибор. *Кондиционер ҡулланыу.*

**КОНДИ́ЦИЯ** [*рус.* ⟨ *лат.*] *и. махс.* Нимәнең дә булһа сифатына ҡарата ҡуйылған талап нормаһы. *Сәсеү орлоғоноң кондицияһы. Кондицияға еткереү.*

**КОНДИЦИЯЛЫ** *с. махс.* Талап ителгән сифатҡа, кондицияға ярашлы. *Кондициялы орлоҡ.*

**КОНДИЦИЯҺЫҘ** *с. махс.* Ҡуйылған стандартҡа, кондицияға тура килмәгән. *Кондицияһыҙ орлоҡ.*

**КО́НДОР** [*рус.*] *и. ҡар.* **ҡондор.**

**КОНДУ́КТОР** [*рус.* ⟨ *лат.*] *и.* **1.** Тимер юл транспортында тәртип һәм именлек һаҡлап, поезды оҙатып барған хеҙмәткәр. *Тормозлы вагондарҙың площадкаларында ҡуйтыр толопҡа төрөнгән кондукторҙар, елгә арҡа ҡуйып, бөршәйеп ултыра.* Х. Мохтар.

**2.** Ҡала транспортында (мәҫ. трамвай, автобуста) билет һатып, тәртип һаҡлап барған хеҙмәткәр.

**КОНКРЕТ** [*рус.* конкретный ⟨ *лат.*] *с.* Асыҡ булған, билдәле, реаль; *киреһе* абстракт. *Конкрет бурыстар.* / Аныҡ билдәләнгән, айырым күрһәтелгән. *Конкрет план. Конкрет рәүештә.* ■ *[Тышҡы политик] акцияларҙың иң мөһиме — бөтә донъяла ядро ҡоралын тулыһынса юҡ итеүҙең аныҡ билдәләнгән ваҡытҡа иҫәпләнгән конкрет программаһы.* «Совет Башҡортостаны», 1986, 16 ғинуар.

**КОНКРЕТЛАШТЫРЫУ** *ҡ.* Конкрет төҫ биреү, аныҡ итеп билдәләү; асыҡлау. *Дөйөм хәлде конкретлаштырып биреү.*

**КОНКРЕТЛАШЫУ** *ҡ.* Конкрет төҫ алыу, асыҡланыу. *[Әһрәмов] үткән мәжлестәрҙәге кеүек, һүҙен Сыңғыҙ хан, Аҡһаҡ Тимерҙәрҙән башлап, тарих ҡосаҡламаны, әхүәлдең конкретлашҡанын хәтерендә тотоп, һүҙе ҡыҫҡа булды.* А. Таһиров.

**КОНКРЕТЛЫҠ** *и.* Конкрет булыу күренеше. *Конкретлыҡҡа ынтылыу. Конкретлыҡ етешмәү.* ■ *Тарихи йырҙарға барынан да элек конкретлыҡ хас.* С. Галин.

**КОНКУРЕ́НТ** [*рус.*] *и.* Өҫтөнлөк өсөн барған ярышта йәки көрәштә ҡатнашыусы.

**КОНКУРЕНТЛЫҠ:** **конкурентлыҡ итеү** 1) өҫтөнлөк өсөн көрәшеү; 2) конкуренцияла (2 мәғ.) ҡатнашыу.

**КОНКУРЕ́НЦИЯ** [*рус.* ⟨ *лат.*] *и.* **1.** Берәй өлкәлә өҫтөнлөк алыу өсөн барған ярыш.

**2.** Капиталистар араһындағы күберәк файҙа алыу өсөн барған көрәш.

**КО́НКУРС** [*рус.* ⟨ *лат.*] *и.* Ҡатнашыусылар араһынан иң лайыҡлыһын һайлап алырға мөмкинлек биргән ярыш. *Конкурс иғлан итеү. Конкурста ҡатнашыу. Конкурс комиссияһы.* ■ *Пьеса конкурсҡа бирелде һәм конкурс йомғағында .. беренсе премияға тәҡдим ителде.* С. Кулибай.

◆ **Конкурстан үтеү** имтиханда йәки башҡа нәмәлә башҡаларҙан өҫтөнлөк күрһәтеп, уҡыуға йәки эшкә ҡабул ителеү. *Маһира быйыл .. пединститутҡа имтихан тапшырырға барғайны, конкурстан үтә алманы.* Ф. Иҫәнғолов.

**КОНОВА́Л** [*рус.*] *и. иҫк.* Мал-тыуар имсеһе. *Халыҡ уны [Базлый бабайҙы] .. коновал тип тә йөрөй, мал-тыуарҙа ниндәй сир булһа ла, уға ғына күрһәтә.* Б. Бикбай.

**КОНОВО́Д** [*рус.*] *и.* Ғәскәри һыбайлылар йәйәүләгән арала аттарҙы ҡарап тора торған кеше. *Коновод аттар менән бер 50 метр артта ҡалды.* «Ағиҙел», 1967, № 2.

**КОНОГО́Н** [*рус.*] *и. иҫк.* Шахтала вагонетка йөрөткән эшсе. *Ул коногон ине шахтала, мин — тормозной уның артында: «Паровоз» тип йөрөй инек беҙ уның етеҙ көрән атына.* М. Сөндөклә.

**КОНСЕРВА** [*рус.* консервы ⟨ *фр.*] *и.* Тейешенсә эшкәртеп, быяла йәки ҡалай һауытҡа томалап ҡуйылған ашамлыҡ. *Балыҡ консерваһы. Ит консерваһы. Еләк-емеш консерваһы. Консерва заводы. Консерва эшләү.*

**КОНСЕРВАЛАНЫУ** *ҡ. төш. ҡар.* **консервалау.** *Консерваланған алма. Консерваланған борсаҡ.*

**КОНСЕРВАЛАУ** *ҡ.* Аҙыҡ-түлекте боҙолмай оҙаҡ һаҡланһын өсөн тейешенсә эшкәртеп, быяла йәки ҡалай һауытҡа томалап ябыу. *Балыҡ консервалау. Помидор консервалау.*

**КОНСЕРВАТИВ** [*рус.* консервативный ⟨ *лат.*] *с.* **1.** Иҫкене алға һөргән, яңылыҡҡа дошман. *Консерватив кеше. Консерватив ҡараш.*

**2.** *мед.* Хирургик ысул ҡулланмай, операцияһыҙ башҡарылған. *Консерватив терапия.*

**КОНСЕРВАТИ́ЗМ** [*рус.*] *и.* Иҫкене яҡлауға, яңылыҡты кире ҡағыуға нигеҙләнгән ҡараш. *Беҙҙең шағирҙар яңының үҫешенә ҡамасаулай торған иҫкене, консерватизм күренештәрен ҡамсылауҙы, ни өсөндөр, драматургия эше генә тип ҡарайҙар.* Ә. Харисов.

**КОНСЕРВА́ТОР** [*рус.* ⟨ *лат.*] *и.* **1.** Консерватизм яҡлы, консерватив ҡарашлы кеше.

**2.** Консерватив ҡарашлы, реакцион политик партия ағзаһы.

**КОНСЕРВАТО́РИЯ** [*рус.* ⟨ *ит.*] *и.* Юғары музыкаль уҡыу йорто. *Завод директорының ҡыҙы Зәйтүнә йырсы булырға уйлай, консерваторияға китә.* Р. Ниғмәти.

**КОНСЕРВАТОРЛЫҠ** *и.* Консерваторға (1 мәғ.) хас сифат. *Консерваторлыҡта ғәйепләү.* ■ *[Алпаев:] Ҡыҙғаныҫҡа ҡаршы, ҡайһы берәүҙәр һаман да консерваторлыҡ сиренән арына алмай, иҫкелеккә йәбешә, яңылыҡтан ҡурҡа.* Н. Ҡотдосов.

**КОНСЕРВА́ЦИЯ** [*рус.*] *и.* **1.** Тейешенсә эшкәртеп, тейешле шарттарҙа тотоп боҙолоуҙан һаҡлау эше.

**2.** Нимәнеңдер эшен, үҫешен ваҡытлыса туҡтатҡан хәл. *Завод консервацияла ине.* «Совет Башҡортостанының ун йылы», 1929.

**КОНСЕРВАЦИЯЛАУ** *ҡ.* **1.** Тейешенсә эшкәртеп, тейешле шартта тотоп, боҙолоуҙан һаҡлау (мал аҙығына ҡарата).

**2.** Низеңдер эшен, үҫешен ваҡытлыса туҡтатыу. *Заводты консервирлау.*

**КОНСИ́ЛИУМ** [*рус.* ⟨ *лат.*] *и.* Ауырыуҙың асылын һәм дауалау юлдарын билдәләү өсөн йыйылған врачтар кәңәшмәһе. *Консилиум саҡырыу. Консилиум үткәреү.* ■ *[Низам:] Консилиум булды, Гөлбикә апай. Врачтар бергә йыйылышып ҡараны. Эш ысынлап та төҙәлеүгә бара.* Р. Ниғмәти.

**КОНСОЛИДА́ЦИЯ** [*рус.*] *и.* Низеңдер бергә тупланып ныҡытылышы.

**КОНСОЛИДАЦИЯЛАУ** *ҡ. кит.* Туплап ныҡытыу. *Тыныслыҡ яҡлылар көсөн консолидациялау.*

**КОНСОНА́НС** [*рус.* ⟨ *фр.*] *и.* **1.** *муз.* Өн, ауаздарҙың үҙ-ара ярашып килешле яңғырауы; аһәңдәшлек; *киреһе* **диссонанс.**

**2.** *әҙ.* Баҫым алдындағы йәки баҫым артындағы өндәрҙең тап килеүенә нигеҙләнгән рифма.

**КОНСОНАНТИ́ЗМ** [*рус.* ⟨ *лат.*] *и. лингв.* Телдең тартынҡы өндәр системаһы. *Башҡорт теленең консонантизмы.*

**КОНСО́РЦИУМ** [*рус.* ⟨ *лат.*] *и. эк.* Капиталистик промышленность компанияларының йәки бер нисә банктың бергәләшеп ҙур финанс эштәре башҡарыу өсөн ваҡытлыса килешеүе.

**КОНСПЕ́КТ** [*рус.* ⟨ *лат.*] *и.* Берәй нәмәнең ҡыҫҡаса эстәлеген күрһәткән яҙма. *Китаптың конспекты. Лекция конспекты. Конспект төҙөү.*

**КОНСПЕКТИВ** [*рус.* конспективный] *с.* Конспект рәүешендәге; ҡыҫҡаса яҙылған. *Конспектив яҙма.*

**КОНСПЕКТЛАУ** *ҡ.* Берәй нәмәнең эстәлеген ҡыҫҡаса яҙыу; конспект яҙыу. *Мәҡәләне конспектлау.*

**КОНСПИРАТИВ** [*рус.* конспиративный] *с.* Конспирацияға бәйләнешле; йәшерен. *Конспиратив квартира. Конспиратив ойошма.*

**КОНСПИРА́ТОР** [*рус.* ⟨ *лат.*] *и.* Конспирация юлы менән эш иткән кеше.

**КОНСПИРА́ЦИЯ** [*рус.* ⟨ *лат.*] *и.* Үҙ эшмәкәрлеген һәм ағзаларын сер итеп һаҡлау өсөн йәшерен ойошма тарафынан ҡулланылған эш ысулы; сер тота, һаҡлай белеү. *[Михаил — Хисмәтуллинға:] Шулай ҙа ул малай менән тапҡырҙан-тапҡыр бәйләнеш тотма. Ғәйзулла кемдән листовка алғанын белмәһен. Конспирация һаҡларға кәрәк.* Я. Хамматов.

**КОНСТАТАЦИЯЛАУ** *ҡ. ҡар.* **билдәләү** 3.

**КОНСТИТУТИВ** [*рус.* конститутивный ⟨ *фр.*] *с. кит.* Низеңдер нигеҙен тәшкил иткән, асылын билдәләгән. *Конститутив ҡағиҙәләр.*

**КОНСТИТУЦИОН** [*рус.* конституционный] *с.* Конституцияға бәйләнешле. *Конституцион закон.* / Конституцияға нигеҙле. *Конституцион төҙөлөш.*

**КОНСТИТУ́ЦИЯ** [*рус.* ⟨ *лат.*] *и.* **1.** Илдәге йәмғиәт һәм дәүләт ҡоролошон, һайлау системаһын, дәүләт органдарының төҙөлөш һәм эш принциптарын, граждандарҙың хоҡуҡ бурыстарын билдәләгән төп закон.

**2.** Организмдың анатомик һәм физиологик яҡтан үҙенсәлекле төҙөлөшө. *Кешенең конституцияһы.*

**КОНСТИТУЦИЯЛЫ** *с.* Конституцияға нигеҙләнгән. *Конституциялы дәүләт. Конституциялы ҡоролош.*

◆ **Конституциялы монархия** монарх властын конституция менән сикләгән дәүләт ҡоролошо.

**КОНСТРУКТИВ** [*рус.* конструктивный] *с.* **1.** Ниҙендер конструкцияһына, төҙөлөшөнә бәйле. *Машинаның конструктив үҙенсәлеге.*

**2.** Нигеҙ булырлыҡ. *Конструктив тәҡдим.*

**КОНСТРУ́КТОР** [*рус.*] *и.* **1.** Нимәнеңдер конструкцияһын төҙөгән, конструкция яһаған кеше. *Баш конструктор. Конструкторҙар бюроһы.*

**2.** Балаларға төрлө нәмәләр төҙөү, ҡороу өсөн эшләнгән ваҡ ҡына деталдәр йыйылмаһы.

**КОНСТРУКЦИОН** [*рус.* конструкционный] *с.* Конструкция (2 мәғ.) өсөн, ҡатмарлы ҡоролмалар өсөн булған. *Конструкцион материалдар комплексы.*

**КОНСТРУ́КЦИЯ** [*рус.* ⟨ *лат.*] *и.* **1.** Төрлө өлөштәрҙән торған ҡатмарлы машина һәм ҡоролмаларҙың төҙөлөшө. *Күперҙең конструкцияһы. Машинаның конструкцияһы.*

**2.** Ҡатмарлы ҡоролма һәм уның айырым киҫәктәре. *Тимерле бетон конструкция. Йыйылма конструкция.*

**3.** *грам.* Һүҙҙәрҙең грамматик бәйләнеше. *Синтаксик конструкция. Эйәрсән һөйләмле конструкция.*

**КО́НСУЛ** [*рус.* ⟨ *лат.*] *и.* Үҙ дәүләтенең һәм үҙ иле граждандарының хоҡуғын йәки экономик мәнфәғәтен яҡлау өсөн сит дәүләттә вәкиллек иткән вазифалы кеше. *Генераль консул. Хәрби консул.*

**КОНСУЛЛЫҠ** *и.* Башында консул торған вәкиллек һәм шул вәкиллек урынлашҡан йорт.

**КОНСУЛЬТА́НТ** [*рус.* ⟨ *лат.*] *и.* Үҙ эшенә бәйле мәсьәләләр буйынса консультация биргән кеше.

**КОНСУЛЬТАТИВ** [*рус.* консультативный] *с.* Фекер алышыуҙа ҡатнашлыҡ итеү хоҡуғына эйә булған. *Консультатив комитет. Консультатив орган.*

**КОНСУЛЬТА́ЦИЯ** [*рус.* ⟨ *лат.*] *и.* **1.** Белгестең ниндәйҙер мәсьәлә буйынса биргән кәңәше. *Консультация алыу. Консультация биреү.* / Уҡытыусының уҡыусыларға дәрестән тыш күрһәткән ярҙамы һәм шул ярҙам йөҙөнән үткәргән дәресе. *Консультация үткәреү.*

**2.** Кәңәш ярҙамы күрһәтеү менән шөғөлләнгән учреждение. *Балалар консультацияһы. Ҡатын-ҡыҙҙар консультацияһы. Юридик консультация.*

**КОНТА́КТ** [*рус.* ⟨ *лат.*] *и.* **1.** *тех.* Ике электр сымының тоташыуы һәм шулар тоташҡан урын. / Электр тогы үткәргестәрен тоташтыра торған ҡорал. *Тракторҙың «сирен» Өлфәт һиҙенә ине. Контакт боҙолған булһа кәрәк.* Ғ. Лоҡманов.

**2.** Туранан-тура бәйләнеш. *Ауырыу кеше менән контактта булыу. Контактҡа инеү.* / Тығыҙ бәйләнеш, эштәге берҙәмлек. *Яҡшы контакт булдырыу.*

**КОНТАКТЛЫ** *с.* Контакт (1 мәғ.) ярҙамында башҡарылған. *Контактлы электросварка. Контактлы көсөргәнеш.*

**КОНТЕ́ЙНЕР** [*рус.* ⟨ *ингл.*] *и.* Платформаға йәки машинаға ултыртып йөк йөрөтөү, космик ракеталарҙағы ғилми аппараттарҙы ҡуйыу өсөн ҡулланылған махсус йәшник, һауыт. *Тимер юл контейнеры. Контейнер менән ебәреү.*

**КОНТЕ́КСТ** [*рус.* ⟨ *лат.*] *и.* Тексттың бөтөн бер мәғәнәгә эйә булып, эсенә ингән һүҙ йәки фразаның мәғәнәһен асыҡларға мөмкинлек биргән өлөшө. *Ҡылымдың күп мәғәнәлеге фәҡәт һөйләм эсендә, контекст эсендә генә асыла.* Ж. Кейекбаев.

**КОНТИНГЕ́НТ** [*рус.* ⟨ *лат.*] *и.* **1.** Бер эш тирәһендә тупланған кешеләр төркөмө. *Студенттар контингенты. Уҡыусылар контингенты.*

**2.** *махс.* Билдәле бер маҡсат өсөн билдәләнгән норма. *Ташкумерҙең экспорт контингенты.*

**КОНТИНЕ́НТ** [*рус.* ⟨ *лат.*] *и.* Бөтә яҡлап океан менән уратып алынған ҙур ҡоро ер; ҡитға. *Америка континенты.*

**КОНТИНЕНТАЛЛӘШЕҮ** *ҡ.* Континенталгә әйләнеү (климатҡа ҡарата).

**КОНТИНЕНТАЛЬ** [*рус.* континентальный] *с.* Континентҡа хас. *Континенталь үҫемлек.* / Континентта урынлашҡан. *Континенталь илдәр.*

◆ **Континенталь климат** диңгеҙҙән алыҫ ятҡан ерҙәргә хас климат (ҡыш һыуыҡ; йәй эҫе, яуым әҙ була). *Киҫкен континенталь климат. Уртаса континенталь климат.*

**КОНТИНЕНТ-АРА** *с.* Континенттар араһында йөрөгән, континенттар араһын бәйләгән. *Континент-ара ракета.*

**КОНТО́РА** [*рус.* ⟨ *нем.*] *и.* Төрлө үҙ аллы хужалыҡ һәм финанс ойошмаларының, предприятиеларҙың административ канцелярия бүлеге һәм шул бүлек урынлашҡан бина. *Почта контораһы. Контора йорто. Контора кеңәгәһе.*

**КОНТО́РЩИК** [*рус.*] *и.* Конторала эшләгән кеше.

**КОНТР** [*рус.* контра ⟨ *лат.*] *и.* Совет власына ҡаршы булған дошман кеше. *[Миңлебай — Мәсәбих тураһында:] Контр ул тим бит инде, советҡа йәне-тәне .. менән ҡаршы.* В. Исхаҡов.

**КОНТРАБА́НДА** [*рус.* ⟨ *ит.*] *и.* **1.** Тыйылған йәки һалым һалынған тауарҙарҙың йәшерен юл менән бер илдән икенсе илгә үткәрелеүе. *Контрабанда тауары. Контрабанда менән шөғөлләнеү.*

**2.** *йыйн.* Ошо юл менән үткәрелгән тауар.

**КОНТРАБАНДИ́СТ** [*рус.*] *и.* Контрабанда менән шөғөлләнгән кеше.

**КОНТРАБА́С** [*рус.* ⟨ *ит.*] *и.* Иң ҡалын тауышлы ҡыллы музыка ҡоралы.

**КОНТР-АДМИРА́Л** [*рус.*] *и.* Иң кесе адмирал дәрәжәһе һәм шул дәрәжәләге кеше.

**КОНТРА́КТ** [*рус.* ⟨ *лат.*] *и.* Һәр ике яҡтың йөкләмәһен билдәләгән яҙма килешеү. *Контракт төҙөү. Контрактҡа ҡул ҡуйыу.* ■ *Ер һөрөргә күрше МТС-тан контракт менән килде трактор.* Ғ. Амантай.

**КОНТРАКТА́ЦИЯ** [*рус.*] *и.* **1.** Ниҙелер билдәле бер шарт буйынса, күрһәтелгән ваҡытта килтереү һәм тапшырыу тураһында контракт төҙөү эше.

**2.** Әҙерләү ойошмаларының контракт буйынса колхоз һәм колхозсыларҙан иген, мал һәм башҡа нәмә йыйыу тәртибе. *Контрактация договоры.* ■ *[Ғази:] Бына хәҙер контрактация бара. Шуға ҡаршы торорға кәрәк.* А. Таһиров.

**КОНТРАКТЛАНЫУ** *ҡ. төш. ҡар.* **контрактлау.** *Контрактланған мал.*

**КОНТРАКТЛАУ** *к.* Ниҙер алыу йәки тапшырыу өсөн контракт төҙөү. *Игенде контрактлау. Малды контрактлау.*

**КОНТРА́ЛЬТО** [*рус.*] *и.* Йырсы ҡатын-ҡыҙҙарҙағы иң ҡалын тауыш.

**КОНТРАМА́РКА** [*рус.* ⟨ *фр.*] *и.* Тамаша залына түләүһеҙ инергә хоҡуҡ биргән талон йәки ҡағыҙ. *[Нурый:] Шулай бер ваҡыт Өфөлә бер бай малайы менән уның приказчигы театрға буш инергә тырышалар бит, беҙҙең спектаклде маҡтаған булып, йылышалар. Ахры .. ике контрамарка алып бирҙем.* А. Таһиров.

**КОНТРАСЛАУ** *к.* Ҡапма-ҡаршы ҡуйыу. *Шағир [М. Кәрим] бөгөнгө ҡояшлы шат тормошто тағы ла асығыраҡ күрһәтеү өсөн иҫке Россияның йәмһеҙ, ҡараңғы тормошон айһыҙ ҡара төн образында контраслап бирә.* Ғ. Хөсәйенов.

**КОНТРАСЛЫ** *с. фото* Контраст менән эшләнгән. *Контраслы һүрәт.*

**КОНТРА́СТ** [*рус.* ⟨ *фр.*] *и.* **1.** Күҙгә бәрелеп, ныҡ һиҙелеп торған ҡапма-ҡаршылыҡ. *Социаль контрастар. // Контраст төҫ.*

**2.** Һынлы сәнғәттә, фотола төҫтәрҙең, буяуҙың сағыулығындағы айырмалыҡ, ҡапма-ҡаршылыҡ. *Буяуҙағы контрастар.*

**КОНТРАТА́КА** [*рус.*] *и.* Оборонала тороусыларҙың һөжүм итеүселәргә ҡаршы күтәрелгән атакаһы. *Контратакаға күтәрелеү. Контратаканы кире ҡағыу.*

**КОНТРАТАКАЛАУ** *к.* Контратака яһау. *Дошманды контратакалау.*

**КОНТРИБУ́ЦИЯ** [*рус.* ⟨ *лат.*] *и.* Еңелгән ил тарафынан еңгән дәүләткә түләнә торған аҡса. *Контрибуция аҡсаһы. Контрибуция түләү.* / Баҫып алынған ер йәки еңелгән синыф халҡынан йыйыла торған аҡса, аҙыҡ һ. б. нәмә. *Контрибуция һалыу. Контрибуция алыу.*

**КОНТРОЛЁР** [*рус.* ⟨ *фр.*] *и.* Контроль яһаусы, кем йәки нимәнелер тикшереүсе вазифалы кеше. *Тимер юл контролёры. Йәмғәт тарафынан ҡуйылған контролёр.*

**КОНТРОЛЛЕК** *и.* Кемдер, нимәлер өҫтөнән ҡуйылған күҙәтмә йәки хакимлек. **Контроллек итеү** контроль яһау. *Контроллек итеүсе органдар. Колхозсыларҙың дөйөм йыйылышы идара эшенә контроллек итә.*

**КОНТРО́ЛЬ** [1] [*рус.* ⟨ *фр.*] *и.* **1.** Тикшереү маҡсатындағы күҙәтмә. *Автоматик контроль. Даими контроль. Контроль комиссияһы. Контролгә алыу. Контролдә тотоу. Контроль яһау.*

**2.** Эштең барышын, дөрөҫлөгөн тикшереп тороу менән шөғөлләнгән ойошма. *Дәүләт контроле.*

**3.** *йыйн.* Контролёрҙар.

**КОНТРОЛЬ** [2] [*рус.* контрольный] *с.* Ниҙең дә булһа дөрөҫлөгөн тикшереү өсөн, контроль яһау өсөн хеҙмәт иткән. *Контроль эш. Контроль үлсәү.*

**КОНТРРАЗВЕ́ДКА** [*рус.*] *и.* Төрлө диверсияға, шпионажға ҡаршы көрәшеүсе дошман агенттарын эҙәрлекләүсе ойошма.

**КОНТРРАЗВЕ́ДЧИК** [*рус.*] *и.* Контрразведка хеҙмәткәре.

**КОНТРРЕВОЛЮЦИОН** [*рус.* контрреволюционный] *с.* Революцияға ҡаршы йүнәлтелгән, революцияға дошман булған. *Контрреволюцион ойошмалар.* ■ *Шәһит Хоҙайбирҙин .. контрреволюцион Кронштадт восстаниеһын баҫтырыуҙа үҙ ихтыяры менән ҡатнаша.* Р. Ҡузыев.

**КОНТРРЕВОЛЮЦИОНЕ́Р** [*рус.*] *и.* Контрреволюция яҡлы, контрреволюцион көрәштә ҡатнашҡан кеше.

**КОНТРРЕВОЛЮ́ЦИЯ** [*рус.* ⟨ *фр.*] *и.* Реакцион кластарҙың революцияға ҡаршы алып барған көрәше.

**КОНТРҺӨЖҮМ** *и.* Дошман һөжүменә ҡаршы яуап рәүешендә ойошторолған һөжүм. *Контрһөжүмгә күсеү. Контрһөжүм әҙерләү.* ■ *Уларҙы [немецтарҙы] Ильмин күле янында туҡтатып, контрһөжүм башланыҡ.* И. Ғиззәтуллин.

**КОНТУЖЕН** [*рус.* контуженный]: **контужен булыу** контузия алыу. *[Зелинский] сафта контужен булған, дүрт ай лазаретта ятҡан.* А. Таһиров.

**КОНТУ́ЗИЯ** [*рус.* ⟨ *лат.*] *и.* Ниндәйҙер тәьҫирҙән (мәҫ. көслө шартлауҙан, ныҡ һуғылыуҙан һ. б.) организмдың шанғып имгәнеүе. *[Хәкимә:] Ғүмере генә оҙон булманы [атаһының] .. фронтта алған контузиянан үлеп китте.* И. Абдуллин. **Контузия алыу** контузиянан имгәнеү. *Ауыр бомба шартлағанда контузия алған Батюк һаман аҡылын йыя алмай иҫәңгерәп, окоп төбөндә ултыра.* Д. Исламов.

**КО́НТУР** [*рус.* ⟨ *фр.*] *и.* Нәмәнең айырым бер ерлектәге һыҙатланышы, тышҡы күренеше. *Ҡаланың дөйөм контуры.* / Нәмәнең һыҙыҡтар менән генә яһалған, һыҙма рәүешендәге һүрәте.

**КОНТУРЛАНЫУ** *к. төш. кар.* **контурлау.**

**КОНТУРЛАУ** *к.* Нәмәнең дөйөм тышҡы рәүешен һүрәтләп һыҙыу.

**КОНТУРЛЫ** *с.* Контур рәүешендәге. *Контурлы рәсем.*

♦ **Контурлы карта** ер-һыуҙың исемен яҙмай, һыҙма рәүешендә генә биргән географик карта. **Контурлы һыҙыҡ** нөктәләр менән генә билдәләнгән һыҙыҡ.

**КО́НУС** [*рус.* ⟨ *гр.*] *и. мат.* Тура мөйөшлө өскөлдө бер катеты тирәһендә әйләндергәндә яһалған геометрик фигура.

**КОНФЕДЕРА́Т** [*рус.*] *и.* Конфедерацияға ингән ойошма йәки дәүләт.

**КОНФЕДЕРА́ЦИЯ** [*рус.* ⟨ *лат.*] *и.* **1.** Ниндәй ҙә булһа ойошмалар берекмәһе, союзы. *Бөтә донъя хеҙмәт конфедерацияһы.*

**2.** Дәүләттәрҙең, һәр береһе үҙ бойондороҡһоҙлоғон һаҡлаған хәлдә, билдәле бер маҡсатҡа (ғәҙәттә политик һәм хәрби маҡсатҡа) ирешеү өсөн генә ойошҡан берекмәһе.

**КОНФЕРАНСЬЕ́** [*рус.* ⟨ *фр.*] *и.* Эстрада концертында концертты алып барған, номерҙар араһында үҙе лә сығыш яһаусы артист.

**КОНФЕРЕ́НЦ-ЗА́Л** [*рус.* ⟨ *нем.*] *и.* Тантаналы йыйылыш, кәңәшмә үткәрә торған зал. *Институттың конференц-залы халыҡ менән тулы ине.* Д. Бураҡаев.

**КОНФЕРЕ́НЦИЯ** [*рус.* ⟨ *лат.*] *и.* Төрлө дәүләт, йәмғәт, партия һ. б. ойошма вәкилдәренең ниндәй ҙә булһа мәсьәләне тикшереү, хәл итеү өсөн үткәргән йыйылышы, кәңәшмәһе. *Ғилми конференция. Уҡытыусылар конференцияһы.*

*Тыныслыҡ яҡлыларҙың халыҡ-ара конференцияһы.*

**КОНФЕТТИ́** [*рус.* ⟨ *ит.*] *и.* Төрлө төҫтәге ваҡ ҡына ҡағыҙ тәңкәләр (бал-маскарадта ҡатнашыусылар бер-береһенә һибә).

**КОНФИГУРА́ЦИЯ** [*рус.* ⟨ *лат.*] *и. кит.* Берәй нәмәнең тышҡы күренеше, тышҡы рәүеше. / Төрлө нәмәнең үҙ-ара урынлашыу тәртибе, ҡатмарлы нәмә өлөштәренең үҙ-ара бәйләнеше. *Йондоҙҙар конфигурацияһы.*

**КОНФИСКА́ЦИЯ** [*рус.* ⟨ *лат.*] *и.* Шәхси милектең көслөк менән дәүләт файҙаһына түләүһеҙ алыныуы. *Конфискация яһау.* / Матбуғатта сыҡҡан әйберҙең тейешле дәүләт органдары тарафынан, халыҡҡа таратмай, биклəп алыныуы.

**КОНФИСКАЦИЯЛАНЫУ** *ҡ. төш. ҡар.* **конфискациялау.**

**КОНФИСКАЦИЯЛАУ** *ҡ.* Конфискация яһау, конфискация үткәреү.

**КОНФЛИ́КТ** [*рус.* ⟨ *лат.*] *и.* Ҡапма-ҡаршы яҡтар, фекерҙәр, көстәр араһындағы ҡаршылыҡ; киҫкен бәхәс. *Синфи конфликт. Конфликтҡа инеү.* / Халыҡ-ара мөнәсәбәттәге көсөргәнешле хәл. *Хәрби конфликт.*

♦ **Конфликт комиссияһы** администрация менән хеҙмәтсәндәр араһында барлыҡҡа килгән конфликтты тикшерә торған комиссия.

**КОНФЛИКТЛЫ** *с.* Ҡаршылыҡлы, бәхәсле. *Конфликтлы мәсьәлә.*

**КОНФЛИКТҺЫҘ** *с.* Ҡаршылыҡһыҙ, бәхәсһеҙ, конфликт булмаған.

**КОНФЛИКТҺЫҘЛЫҠ** *и.* Киҫкен бәхәс, конфликт булмаған хәл. **Конфликтһыҙлыҡ теорияһы** *кит. әҙ.* яҡшы менән иң яҡшы араһындағы ҡаршылыҡ ҡына конфликт була ала тигән теория. *Конфликтһыҙлыҡ теорияһы — ялған, зарарлы теория.. Бындай «теория» яҙыусыны тормош дөрөҫлөгөнән, уның ҡаршылыҡтарынан .. ситкә алып китә.* К. Әхмәтйәнов.

**КОНЦЕНТРА́Т** [*рус.*] *и.* **1.** Тиҙ генә бешереп ашарға йәтеш булһын өсөн тейешенсә эшкәртеп, киптерелгән аҙыҡ. *Какао концентраты. Борсаҡ ашының концентраты.*

**2.** *а. х.* Туҡлыҡлы мал аҙығы.

**3.** *тау* Байыҡтырылған, металл проценты арттырылған руда. *Баҡыр концентраты.*

**КОНЦЕНТРАЦИОН** [*рус.* концентрационный:] **концентрацион лагерь** политик һәм хәрби тотҡондарҙы ябып тотоу урыны.

**КОНЦЕНТРА́ЦИЯ** [*рус.* ⟨ *лат.*] *и.* **1.** Низең дә булһа бер ергә тупланышы. *Производстволағы концентрация процесы.*

**2.** *хим.* Билдәле бер күләмдәге иретмәлә ирегән матдәнең миҡдары.

**КОНЦЕНТРАЦИЯЛАНЫУ** *ҡ. төш. ҡар.* **концентрациялау.** *Концентрацияланған иретмә.*

**КОНЦЕНТРАЦИЯЛАУ** *ҡ.* **1.** *хим.* Иреткесте кәметеп, матдәнең иретмәләге процентын арттырыу; ҡуйыртыу. *Иретмәне концентрациялау.*

**2.** *тау.* Рудалағы металдың процентын арттырыу.

**КОНЦЕНТРАЦИЯЛАШЫУ** *ҡ.* **1.** *хим.* Матдәнең иретмәләге проценты артыу; ҡуйырыу.

**2.** *тау* Рудалағы металдың проценты артыу.

**КОНЦЕ́ПЦИЯ** [*рус.* ⟨ *лат.*] *и.* **1.** Нимәгәлер ҡарата булған бер-береһенә бәйләнешле һәм мөнәсәбәтле ҡараштар системаһы. *Ғилми концепция. Тарихи концепция.*

**2.** Ижад эшендәге, әҫәрҙәге төп фекер, төп идея.

**КОНЦЕ́РН** [*рус.* ⟨ *ингл.*] *и.* Хәҙерге үҫешкән капиталистик илдәрҙәге монополистик берләшмәләрҙең өҫтөнлөк иткән формаһы; ул берләшкән ваҡ предприятиеларҙың үҙ аллыҡ хоҡуғын ҡыҫыуға, эште финанс магнаттарының контроленә буйһондороуға нигеҙләнгән.

**КОНЦЕ́РТ** [*рус.* ⟨ *фр.*] *и.* **1.** Төрлө музыкаль, әҙәби, хореографик һ. б. номерҙарҙан тороп, билдәле бер программа буйынса алып барылған тамаша. *Симфоник концерт. Концерт программаһы. Концерт ҡуйыу. Концерт тыңлау.*

**2.** Оркестр оҙатыуында уйнай торған инструмент өсөн яҙылған ҙур музыкаль әҫәр. *Скрипка өсөн яҙылған концерт. Фортепьяно өсөн яҙылған концерт.*

**КОНЦЕРТМЕ́ЙСТЕР** [*рус.* ⟨ *нем.*] *и.* **1.** Оркестрҙағы айырым бер төркөмдөң етәксеһе (скрипкасылар төркөмөндә — беренсе скрипкасы, виолончелистар төркөмөндә — беренсе виолончелист һ. б.).

**2.** Симфония йәки опера оркестрының солисы.

**3.** Йырсы менән бергә бер партияны өйрәнгән пианист-аккомпаниатор.

**КОНЦЕССИОН** [*рус.* концессионный] *с.* Концессия нигеҙендә ҡаралған, концессияға бәйләнешле. *Концессион магазин. Концессион предприятие.*

**КОНЦЕ́ССИЯ** [*рус.* ⟨ *лат.*] *и.* **1.** Дәүләт ҡарамағындағы ер-һыу байлығын, берәй предприятие йәки хужалыҡ объектын ваҡытлыса файҙаланырға биреү тураһындағы договор. *Концессия түләме.* ■ *Өфө электр станцияһы 1897 йылдан бире эшләй, ул концессия хоҡуғы менән хосуси кеше тарафынан һалдырылған булған.* «Совет Башҡортостанының ун йылы», 1929.

**2.** Шул договор нигеҙендә ойошторолған предприятие.

**КОНЦЛА́ГЕРЬ** [*рус.*] *и. шул уҡ* **концентрацион лагерь** (*ҡар.* **концентрацион**).

**КОНЪЮНКТИ́ВА** [*рус.* ⟨ *лат.*] *и. анат.* Күҙҙең ҡабаҡ аҫты менән алмаһын ҡаплап торған лайлалы тиресә.

**КОНЪЮНКТИВИ́Т** [*рус.*] *и. мед.* Конъюнктиваның шешеүе.

**КОНЪЮНКТУ́РА** [*рус.* ⟨ *лат.*] *и.* **1.** Билдәле бер өлкәлә барлыҡҡа килгән хәл, шарт. *Халыҡ-ара конъюнктура. Политик конъюнктура.*

**2.** Тауар етештереү һәм сауҙа менән бәйле хужалыҡ эштәренең торошон сағылдырған билдәләр (тауар сығарылыу күләме, уның хаҡы, ҡиммәтле ҡағыҙҙар курсы һ. б.).

**КОНЬКИ́** [*рус.*] *и.* Аяҡ кейеменә беркетеп боҙҙа шыуыу өсөн эшләнгән үткер ҡырлы тимер табан. *Агас коньки. Коньки менән йөрөү.* ■ *Күҙгө кеүек боҙ өҫтөндә алһыу битле йәштәр, балалар коньки шыуа.* М. Хәй.

**КОНЬКИСЫ** *и.* Коньки менән йөрөгән, коньки спорты менән шөғөлләнгән кеше. *Конькисылар ярышы.*

**КОНЬЯ́К** [*рус.* ⟨ *фр.*] *и.* Аҡ йөҙөм винођын ҡыуып, имән мискәлә оҙаҡ ултыртып яһаған көслө иҫерткес эсемлек.

**КО́НЮХ** [*рус.*] *и.* Ат ҡараусы.

**КОНЮ́ШНЯ** [*рус.*] *и. ҡар.* **атлыҡса** 1.

**КООПЕРАТИ́В** [1] [*рус.*] *и.* **1.** *тар.* Эш ҡоралдарын һәм хеҙмәтте берләштереү нигеҙендә ойошторолған хужалыҡ. *Ауыл хужалығы кооперативы.* ■ *Көҙ, баш-күҙ алғас, береген ике ауыл кооператив асып ебәрҙек.* Ғ. Амантай.

**2.** Ауыл хужалығына торлаҡ төҙөүгә, сауҙаға бәйле эштәрҙе бергәләп алып барыу өсөн ағзаларҙың пайы иҫәбенә ҡоролған хеҙмәт берекмәһе; кооперация. *Төҙөлөш кооперативы.*

**3.** Пайлы сауҙа берекмәһенең магазины. *Кооператив, спекулянт кеүек, Аҡназарҙың кеҫәһен [аҡсаһын] төрлө хәйләләр менән тотоп ҡалманы.* Ғ. Дәүләтшин.

**КООПЕРАТИВ** [2] [*рус.* кооперативный] *с.* Күмәк кешенең хеҙмәтенә йәки ҡатнашлығына нигеҙләнгән. *Кооператив магазин. Кооператив предприятие.*

**КООПЕРАТИВЛАШТЫРЫУ** *ҡ.* Кооперативҡа [1] (1 мәғ.) ойоштороу. *Ауыл хужалығын кооперативлаштырыу.*

**КООПЕРАТИВЛАШЫУ** *ҡ.* Кооперативҡа [1] (1 мәғ.) ойошоу.

**КООПЕРА́ТОР** [*рус.*] *и.* Кооперацияла (2 мәғ.) эшләгән кеше.

**КООПЕРА́ЦИЯ** [*рус.* ⟨ *лат.*] *и.* **1.** Хеҙмәт ойоштороуҙың үҙ-ара бәйле булған төрлө эште күмәк кешенең берлекләшеп башҡарыуына нигеҙләнгән бер формаһы. *Кооперацияның төрө йәмғиәт ҡоролошо менән билдәләнә.*

**2.** Ауыл хужалығына, торлаҡ төҙөүгә, сауҙаға һ. б. бәйле эштәрҙе бергәләп алып барыу өсөн ағзалар индергән пай иҫәбенә ҡоролған берекмә; кооператив.

**3.** *ҡар.* **кооператив** [1] 3.

**КООПТА́ЦИЯ** [*рус.* ⟨ *лат.*] *и.* Һайланма органдың һайлау үткәрмәй генә үҙ составына яңы ағзалар ҡабул итеүе.

**КООРДИНАТ** [*рус.* координата ⟨ *лат.*] *и. махс.* Яҫылыҡтағы йәки арауыҡтағы нөктәнең урынын билдәләгән дәүмәл. *Астрономик координаттар. Географик координаттар. Координаттарҙың горизонталь системаһы. Координаттар күсәре.* ■ *Расчёт уңайлы урында туҡтаны. Бер минут эсендә координатты билдәләп алды ла залп бирҙе.* Ә. Ихсан.

**КООРДИНАЦИОН** [*рус.* координационный] *с.* Координацияға мөнәсәбәтле, координацияға ҡараған. *Координацион бәйләнеш.*

**КООРДИНА́ЦИЯ** [*рус.* ⟨ *лат.*] *и.* Төрлө эш, хәрәкәт, фекер һәм башҡа нәмәнең үҙ-ара бәйләнешкә килтерелеше, яратылышы. *Хәрәкәттәге координация.*

**КООРДИНАЦИЯЛАНЫУ** *ҡ. төш. ҡар.* **координациялау.**

**КООРДИНАЦИЯЛАУ** *ҡ.* Төрлө эш, хәрәкәт, күренештәрҙе үҙ-ара бәйләнешкә килтереү; яраштырыу. *Хеҙмәт коллективтарының эшен координациялау. Дәүләт пландарын координациялау.*

**КОПА́Л** [*рус.* ⟨ *исп.*] *и.* Һары йәки ҡоңғорт төҫтәге ҡаты ҡаҙылдыҡ сайыр (лак яһау өсөн ҡулланыла). *Копал лагы.*

**КОПЁР** [*рус.*] *и.* **1.** Ҡаты урынға, тәрәнгә свай ҡаға торған ҡулайлама.

**2.** Күтәргес машинаны урынлаштырыу өсөн тахта ауыҙына ҡуйылған ҡоролма.

**КО́ПИ** [*рус.*] *и. иҫк.* Ташкүмер һәм тоҙ рудниғы йәки карьеры.

**КОПИ́ЛКА** [*рус.*] *и.* Әҙләп аҡса йыйыу өсөн тотола торған тар ғына ауыҙлы ябыҡ һауыт.

**КО́ПИЯ** [*рус.*] *и. ҡар.* **күсермә.**

**КО́ПРА** [*рус.* ⟨ *мал.*] *и.* Кокос сәтләүегенең кокос майы алына торған йомшаҡ итләс өлөшө.

**КОРА́ЛЛ** [*рус.* ⟨ *гр.*] *и. ҡар.* **мәрйен.**

**КОРВЕ́Т** [*рус.* ⟨ *фр.*] *и.* **1.** 18—19 быуаттарҙағы өс мачталы елкәнле хәрби карап.

**2.** Икенсе бөтә донъя һуғышы осоронда инглиздар тарафынан һыу аҫты кәмәләренә ҡаршы ҡулланылған һаҡсы карап.

**КО́РДА** [*рус.* ⟨ *фр.*] *и.* Уртала торған ерҙән түңәрәк буйынса йөрөтөп, ат өйрәткәндә ҡулланылған оҙон теҙген.

**КОРДЕБАЛЕ́Т** [*рус.* ⟨ *фр.*] *и.* Балеттағы күмәк бейеүҙе башҡарған артистар.

**КОРДО́Н** [*рус.* ⟨ *фр.*] *и.* **1.** Сик буйындағы ҙур булмаған пост, һаҡ. *Кордонда хеҙмәт итеү.* ■ *Егеттәр Арыҫландың бөтә ҡушканын тыңлайҙар, ул ҡуйған нәүбәт буйынса ям сабалар, кордонға ҡарауылға барыу кеүек сиреү хеҙмәте үтәйҙәр.* Ғ. Ибраһимов. / Урман йәки заповедниктағы һаҡ. *Кордонда эшләү.*

**2.** Сик буйындағы йәки урмандағы һаҡ торған ер. *Таможня кордоны.* ■ *Беҙ кордонда торабыҙ. Кеше әҙ, бөтәһе лә урмансы.* Н. Мусин.

**КОРЕЙ** *и.* Кореяның төп халҡын тәшкил иткән милләт һәм шул милләттең бер кешеһе. *Корей халҡы. Корей ҡатыны. Корей теле.*

**КОРЕ́ЙКА** [*рус.*] *и.* Сусҡа йәки быҙауҙың түш ите.

**КОРЕЙСА** *р.* **1.** Корей телендә. *Корейса һөйләшеү.*

**2.** Корей халҡына хас рәүештә. *Корейса кейенеү.*

**КОРИДО́Р** [*рус.*] *и.* Йорттоң, бинаның айырым өлөштәрен, квартираның бүлмәләрен тоташтырған оҙон аралыҡ. *Киң коридор. Мәктәп коридоры. Коридор ишеге.* / Ике яҡтан ҡыҫылған тар ара. *Әҙбизташ өйөмдәренең тар коридорынан һаҡлыҡ менән генә үтеп, улар яңынан иркенгә килеп сыҡтылар.* Ф. Локманов.

◆ **Коридор системаһы** бүлмәләрҙең ишеген дөйөм бер коридорға сығарып төҙөү ысулы.

**КОРИФЕ́Й** [*рус.* ⟨ *гр.*] *и.* **1.** Боронғо грек трагедияһындағы хор етәксеһе.

**2.** *юғар.* Ниндәй ҙә булһа эш өлкәһендәге иң күренекле эшмәкәр. *Фән корифейҙары.*

**КОРНЕ́Т** [1] [*рус.* ⟨ *фр.*] *и.* Революцияға тиклемге кавалерия һәм сик һаҡлау ғәскәрендәге иң бәләкәй офицер дәрәжәһе һәм шул дәрәжәләге кеше.

**КОРНЕ́Т** [2] [*рус.* ⟨ *фр.*] *и.* Борғоға оҡшаш еҙ тынлы музыка ҡоралы.

**КОРО́БКА** [*рус.*] *и.* Ҡумта.

♦ **Тиҙлек коробкаһы** станок һәм автомобиль, трактор кеүек машиналарҙың хәрәкәт тиҙлеген йәки йүнәлешен үҙгәртеү өсөн хеҙмәт иткән механизм.

**КОРОЛЁВА** [*рус.*] *и.* **1.** Ҡатын-ҡыҙҙан булған король. *Англия королеваһы.*

**2.** Король ҡатыны.

**3.** *кар.* **ферзь.**

**КОРОЛЛЕК** *и.* Башында король торған ил, дәүләт.

**КОРО́ЛЬ** [*рус.*] *и.* **1.** Ҡайһы бер илдәрҙәге батша титулы һәм шул титулдағы кеше. *Дания короле. Непал короле.* / Билдәле бер промышленность йәки сауҙа өлкәһендә өҫтөнлөк тотҡан эре капиталист. *Автомобиль короле. Нефть короле.*

**2.** Шахмат уйынындағы төп фигура.

**3.** Туздан ҡала икенсе урында торған кәрт.

**КОРО́НКА** [*рус.*] *и.* **1.** Тештең күренеп торған тышҡы өлөшө.

**2.** Тешкә кейҙереп ҡуйған көп. *Көмөш коронка. Коронка ҡуйҙырыу.*

**3.** *тех.* Ер бырауының башына ҡуйылған, түңәрәк ҡулса рәүешендәге киҫкес. *Алмас коронка.*

**КОРПОРА́ЦИЯ** [*рус.* ⟨*лат.*] *и.* Айырым бер ҡатлам йәки профессия кешеләренең дөйөм бер мәнфәғәт нигеҙендә ойошҡан төркөмө. *Эшселәр корпорацияһы. Дәүләт корпорацияһы. Эре корпорациялар.*

**КО́РПУС** [*рус.* ⟨*лат.*] *и.* **1.** Машина һәм механизмдарҙың бөтә өлөшөн йыйып, нығытып көпләп торған нигеҙ, терәк өлөш. *Самолет корпусы. Сәғәт корпусы.*

**2.** Судноның тышҡы көбө. *Һыу аҫты кәмәһененең корпусы.*

**3.** Бергә урынлашҡан бер нисә йорт-бинаның береһе. *Төп корпус. Өс корпуслы больница.* / Бер нисә өлөштән торған ҙур йорттоң бер өлөшө. *Йорттоң алғы корпусы.* / Таҡта умартаның өҫтө-өҫтөнә ҡуйыла торған ҡаттарының береһе. *Өҫкө корпус. Аҫҡы корпус.* ■ *Беҙҙең республика шарттарында ике йәки күп корпуслы умарта тотоу яҡшы.* «Совет Башҡортостаны», 1966, 18 май.

**4.** Бер нисә дивизия йәки бригаданан торған ҙур ғәскәри берекмә. *Гвардия корпусы. Кавалерия корпусы. Танк корпусы. Корпус штабы.*

**5.** Революцияға тиклемге Россияла төрлө махсус хәрби административ берекмә. *Жандармдар корпусы. Хәрби топографтар корпусы.*

**6.** Уртаҡ эш, уртаҡ хеҙмәт тирәһендә ойошҡан рәсми кешеләр төркөмө. *Дипломатик корпус. Офицерҙар корпусы.*

**7.** Революцияға тиклемге Россияла ҡайһы бер ябыҡ хәрби урта мәктәптәр исемендә ҡулланыла. *Кадеттар корпусы.*

**8.** *полигр.* Билдәле бер эрелектәге типография шрифы.

**КОРРЕКТИВ** [*рус.* ⟨*лат.*] *и.* *кар.* **төҙәтмә.**

**КОРРЕКТИРО́ВКА** [*рус.*] *и.* *хәрби* Снаряд төшкән урынды күҙәтеү нигеҙендә туптың атышына индерелгән төҙәтмә. *Корректировка яһау.*

**КОРРЕКТИРО́ВЩИК** [*рус.*] *и.* *хәрби* Корректировка яһаусы.

**КОРРЕКТЛЫ** *с.* *кар.* **илтифатлы 1.**

**КОРРЕ́КТОР** [*рус.* ⟨*лат.*] *и.* Нәшриәт йәки типографияла корректура уҡыу эшен башҡарған кеше.

**КОРРЕКТУ́РА** [*рус.* ⟨*лат.*] **1.** Типография оттискыһын уҡып, хаталарҙы төҙәтеү эше. *Корректура бүлеге.*

**2.** Типографияла йыйған саҡта киткән хаталарҙы төҙәтеү өсөн алынған оттиск. *Корректура уҡыу.*

**КОРРЕ́КЦИЯ** [*рус.* ⟨*лат.*] *и.* *тех.* Үлсәү приборы, регуляторҙар һ. б. -ҙы ҡулланыу шарттарының үҙгәреүенә ҡарап, уларҙың эш-хәрәкәтенә төҙәтмәләр индереү эше. *Коррекция яһау. Коррекция үткәреү.*

**КОРРЕЛЯ́ЦИЯ** [*рус.* ⟨*лат.*] *и.* *кит.* Төрлө нәмә, төшөнсә йәки күренештең үҙ-ара бәйләнеше, үҙ-ара мөнәсәбәте. *Өндәр корреляцияһы.*

**КОРРЕСПОНДЕ́НТ** [*рус.* ⟨*фр.*] *и.* **1.** Кем менәндер хат алышып, яҙышып торған кеше.

**2.** Ваҡытлы матбуғат, радио, телевидениеның урындарҙан хәбәр ебәреп торған хеҙмәткәре; хәбәрсе. *Хәрби корреспондент. Штаттан тыш корреспондент.*

**КОРРЕСПОНДЕ́НЦИЯ** [*рус.* ⟨*лат.*] *и.* **1.** *йыйн.* Почта аша йөрөгән хат һәм төрлө яҙма. *Корреспонденцияны ваҡытында таратыу.*

**2.** Ваҡытлы матбуғат, телевидение, радиоға урындағы корреспонденттарҙан килгән хат. *Редакцияның корреспонденция бүлеге.* / Тормоштағы бер хәлде күрһәткән матбуғат жанры; хәбәр. *Сәнғәт өлкәһенә бәйле корреспонденция. Ҡыҙыҡлы корреспонденция.*

**КОРРО́ЗИЯ** [*рус.* ⟨*лат.*] *и.* **1.** Төрлө химик йәки электрохимик тәьҫир һөҙөмтәһендә металдың тутығыуы, тутығып тарҡалыуы. *Химик коррозия.*

**2.** *геол.* Һыу, һауа тәьҫире менән тау тоҡомдарының ашалыуы, үҙгәреүе. *Коррозияға ҡаршы көрәш.*

**КОРРУ́ПЦИЯ** [*рус.* ⟨*лат.*] *и.* Вазифалы кешеләрҙең һәм йәмғиәт эшмәкәрҙәренең һатылыусанлығы.

**КОРСА́Ж** [*рус.* ⟨*фр.*] *и.* **1.** *иҫк.* Ҡатын-ҡыҙ күлдәгенең билдән өҫкө өлөшө. / Ҡатын-ҡыҙҙың алдан тарттырып бәйләнә торған күкрәк кейеме. *Корсаж бауы.*

**2.** Юбканың ҡаты биллеге.

**КОРСА́Р** [*рус.* ⟨*ит.*] *и.* Диңгеҙ юлбаҫары; пират.

**КОРСЕ́Т** [*рус.* ⟨*фр.*] *и.* Һынын зифа күрһәтеү өсөн ҡатынҡыҙҙар күлдәк эсенән кейә торған тығыҙ яҫы биллек. *Корсет кейеү.* / Имгәнгән умыртҡа һөйәген турайтып тотторոу өсөн кәүҙәгә кейә торған бандаж. *Гипслы корсет.*

**КОРТ** [*рус.* ⟨*ингл.*] *и.* *спорт.* Теннис уйнай торған майҙан.

**КОРТЕ́Ж** [*рус.* ⟨*фр.*] *и.* Тантаналы процессия. *Траурлы кортеж.*

**КО́РТИК** [*рус.* ⟨*фарс.*] *и.* Ғәҙәттә диңгеҙ һәм һауа флотындағы офицерҙар йөрөтә торған ҡыҫҡа һаплы хәнйәр рәүешендәге һалҡын ҡорал.

**КОРУ́НД** [*рус.* ⟨*тамил.*] *и.* Иң ҡаты минерал-

дарҙың береһе, уның төрҙәренә ҡыҙыл, һары, зәңгәр яҡуттар инә. *Корунд яткылыктары.* // *Корунд энә.*

**КОРЯ́К** *и.* РСФСР-ҙың Камчатка өлкәһендәге Коряк автономиялы округының төп халҡы һәм шул халыҡтың бер кешеһе (палеоазиат телдәренең береһендә һөйләшә). *Коряк халкы. Коряк катыны. Коряк теле.*

**КОСЕ́КАНС** [*рус.* ‹ *лат.*] *и. мат.* Тригонометрик функцияларҙың береһе — өҫтәмә мөйөш секансы.

**КОСИ́ЛКА** [*рус.*] *и. а. х.* Бесән сапҡыс машина. *Ат косилкаһы. Трактор косилкаһы.*

**КО́СИНУС** [*рус.* ‹ *лат.*] *и. мат.* Тригонометрик функцияларҙың береһе — өҫтәмә мөйөш синусы.

**КОСМЕТИК** [*рус.* косметический] *с.* Косметикаға мөнәсәбәтле. *Косметик саралар.*

**КОСМЕ́ТИКА** [*рус.* ‹ *гр.*] *и.* **1.** Бит-тәндең сафлығын һаҡлау йәки төҫкә матурлыҡ биреү өсөн күрелгән эш. *Гигиена косметикаһы. Дауалау косметикаһы. Косметика кабинеты.*

**2.** *йыйн.* Биҙәнеү, буяныу нәмәләре (бит майы, пудра, һөрмә һ. б.). *Косметика кулланыу.*

**КОСМОГО́НИК** [*рус.* космогонический] *с.* Ғаләмдең, күк есемдәренең барлыҡҡа килеүенә бәйле. *Космогоник гипотеза.*

**КОСМОГО́НИЯ** [*рус.* ‹ *гр.*] *и.* Астрономияның күк есемдәренең барлыҡҡа килеүен һәм үҫешен өйрәнә торған бүлеге.

**КОСМОДРО́М** [*рус.* ‹ *гр.*] *и.* Космосҡа осоу аппараттарын ҡороу, осорға әҙерләү һәм осороу өсөн тәғәйенләнгән ҡоролмалар һәм техник саралар.

**КОСМОЛО́ГИЯ** [*рус.* ‹ *гр.*] *и.* Астрономик йәһәттән күҙәтергә мөмкин булған бөтә йыһандың дөйөм төҙөлөш закондары тураһындағы тәғлимәт./ Астрономияның шул тәғлимәт менән шөғөлләнгән тармағы.

**КОСМОНА́ВТ** [*рус.*] *и.* Ғилми тикшеренеүҙәр алып барыу һәм космос техникаһын һынау өсөн космосҡа осҡан кеше. *«Һаумыһығыҙ!» — тип өндәшәм, фән-белем йорттарына, йыһан киңлеген айкаган космонавт дуҫтарыма.* А. Игебаев.

**КОСМОНА́ВТИКА** [*рус.* ‹ *гр.*] *и.* Космосҡа осоу теорияһы һәм практикаһы. *Космонавтика мәсьәләләре менән нигеҙҙә Циолковскийҙың замандаштары, Королёвтың фекерҙәштәре, уның шәкерттәре шөғөлләнә, улар ошо эште дауам итә.* «Совет Башҡортостаны», 1987, 11 ғинуар.

**КОСМОПОЛИ́Т** [*рус.* ‹ *гр.*] *и.* Космополитизм ҡарашындағы кеше.

**КОСМОПОЛИТИ́ЗМ** [*рус.* ‹ *гр.*]. *и.* Милләт һәм милли тойғоно кире ҡағып, бөтә донъяны ватан итеп ҡарарға өндәгән идеология.

**КОСМОПОЛИТИК** *с.* Космополитизмға нигеҙләнгән. *Космополитик караш.*

**КО́СМОС** [*рус.* ‹ *гр.*] *и.* Йыһан киңлеге; ғаләм, йыһан. *Автоматик космос станцияһы. Космос карабы. Космос медицинаһы. Космосты өйрәнеү. Космоска осоу.* ■ *Ашыгыс коралланыуҙың космоска сыгыуына юл куймау .. һәм ядро һугышы куркынысын бөтөрөү — иң мөһим бурыс.* «Совет Башҡортостаны», 1985, 27 ноябрь. **Космос тиҙлеге** космос карабының Ер тартымын еңеп, космосҡа сығыуы өсөн кәрәк булған тиҙлек. *Беренсе космос тиҙлеге. Икенсе космос тиҙлеге.*

◆ **Космос нурҙары** бөтә йыһан киңлегенән Ергә килгән атом ядроһы һәм юғары энергия электрондары ағымы. *Кояштың космос нурҙарын башлыса поляр районларҙа һәм Кояш балкыгандан һуң гына курергә мөмкин.* «Совет Башҡортостаны», 1965, 11 апрель. **Космос туҙаны** йыһан киңлегендәге бушлыҡта була торған ваҡ ҡаты киҫәксәләр.

**КОСТЁ́Л** [*рус.* ‹ *пол.*] *и.* Польша католиктары сиркәүе.

**КОСТЁ́Р**[1] [*рус.*] *и. кар.* ут 2.

◆ **Пионер костёры** пионерҙарҙың ут янында үткәрелгән тантаналы йыйылышы. *Костёр уткәреү.*

**КОСТЁ́Р**[2] *и. кар.* **күстерә.**

**КОСТЮ́М** [*рус.* ‹ *фр.*] *и.* **1.** Бер пар итеп тегелгән салбар менән пинжәк йәки юбка менән жакет. *[Камил] арыу гына костюм кейеп, галстук бәйләп йөрөһә лә, ни өсөндөр шәкерткә окшай.* З. Биишева.

**2.** Кейем. *Милли костюм. Спорт костюмы.*

**3.** Сәхнә йәки маскарад өсөн әҙерләнгән кейем. *Карнавал костюмы.* ■ *Башкортса куйылган пьесалар үҙенең костюмы, бейеүе, курайы, йыры, кымыҙ мәжлестәре менән тамашасыларҙа тулы бер тәьҫорат калдыра ине.* Д. Юлтый, В. Мортазин.

**КОСТЮМЕ́Р** [*рус.*] *и.* Театрҙа спектакль өсөн костюм әҙерләп торған кеше.

**КОСЫ́НКА** [*рус.*] *и.* Өс мөйөшлө яулыҡ. *Ебәк косынка.* ■ *[Кыҙ] шакмаклы косынкаһын эйәге аҫтына тартыбырак бәйләне лә, куҙгалып, йәтешләберәк ултырҙы.* Ә. Вәли.

**КОТА́НГЕНС** [*рус.* ‹ *лат.*] *и. мат.* Тригонометрик функцияларҙың береһе — өҫтәмә мөйөш тангенсы.

**КОТЕЛО́К** [*рус.*] *и.* Ялан шарттарында ашһыу өсөн тотола торған тимер күнәсек; ҡула. *Алыҫ та түгел, ҙур палатка эргәһендә котелок тоткан һалдаттар куренә.* Д. Юлтый.

**КОТЁ́ЛЬНЫЙ** [*рус.* котельная] *и.* Пар ҡаҙандары урынлашҡан бүлмә.

**КОТЁ́ЛЬЩИК** [*рус.*] *и.* **1.** Пар ҡаҙаны эшләү оҫтаһы.

**2.** Пар ҡаҙанын хеҙмәтләндергән белгес.

**КО́ТИК** [ *рус.*] *и.* **1.** Тымыҡ океандың төньяғында йәшәүсе, ҡолаҡлы тюлендәр ғаиләһенә ҡараған аҫыл тиреле имеҙеүсе йәнлек. *Ата котик. Котик балаһы.*

**2.** *с. мәг.* Шул йәнлектең тиреһенән тегелгән. *Котик бүрек. Котик яга.*

**КОТЛЕ́Т** [*рус.* котлета ‹ *фр.*] *и.* Тапалған ит йәки балыҡтан һупалаҡлап әҙерләнгән ашамлыҡ. *Котлет тигән нәмәһенән тапманым бер семтем ит. Аштарының ярмаһы юк, торганы коро һыу бит.* Ғ. Дәүләтов./ Шулай уҡ һупалаҡлап, йәшелсә йәки бутҡанан бешергән ашамлыҡ. *Картуф котлеты.*

**КОТЛОВА́Н** [*рус.*] *и.* Ҡоролмаға нигеҙ һалыу өсөн ҡаҙылған соҡор. *Бишәр катлы дүрт йортка нигеҙ һалыу өсөн котлован казып ташлагандар.* К. Мәргән.

**КОТТЕ́ДЖ** [*рус.* ⟨ *ингл.*] *и.* **1.** Ҡала ситендәге ике ҡатлы бер ғаиләлек ҙур булмаған айырым йорт. *Ҡала кварталдары күп ҡатлы йорттарҙан һәм айырым коттедждарҙан тора.* М. Хисмәтов.

**2.** Туристар өсөн тәғәйенләнгән йәйге йорт.

**КО́ФЕ** [*рус.* ⟨ *гол.* ⟨ *ғәр.*] *и.* **1.** Тропик илдәрҙә үҫә торған ҡыҙыл йәки ҡара күк орлоҡло ҡыуаҡ йәки ағас. *Кофе ағасы.*

**2.** Шул ағастың орлоғо; ҡәһүә. *Ҡыҙҙырылған кофе. Кофе тартыу.*/ Шул орлоҡтан йәки шуға оҡшатып башҡа нәмәнән яһалған онтаҡ. *Ысын кофе. Арпанан эшләнгән кофе.*

**3.** Шул онтаҡтан әҙерләнгән эсемлек; ҡәһүә. *Кофе ҡайнатыу. Кофе эсеү.* ■ *Фин ҡатыны .. беҙҙе кофе менән һыйланы.* А. Таһиров.

**КОФЕЙН** [*рус.*⟨*лат.*] *и.* Кофе орлоғо, сәй япрағы һәм башҡа ҡайһы бер үҫемлектәрҙә була торған ҡуҙғытҡыс матдә (медицинала ҡулланыла).

**КОФЕ́ЙНИК** [*рус.*] *и.* Ҡәһүә ҡайната торған һауыт; ҡәһүә сәйнүге. *Көмөш кофейник.*

**КО́ФТА** [*рус.*] *и.* **1.** Ҡатын-ҡыҙҙың билдән юғарғы еңел кейеме. *Еңһеҙ кофта. Сиккән кофта.*

**2.** Ҡатын-ҡыҙҙың йөндән йәки кизенән бәйләгән ҡыҫҡа йылы өҫ кейеме.

**КО́ФТА-Ю́БКА** [*рус.*] *и. йыйн.* Икеһе бер кейем итеп кейелгән кофта менән юбка; ҡатын-ҡыҙҙар костюмы. *Кофта-юбка кейәм инде ҡала ҡыҙҙары кеүек* (Халыҡ йырынан).

**КОЧЕГА́Р** [*рус.*] *и.* Пар ҡаҙанына яғыулыҡ биргән эшсе. *Паровоз кочегары.*

**КОЧЕГА́РКА** [*рус.*] *и.* Пар ҡаҙандары урынлашҡан һәм уларға яға торған бүлмә. *Кочегарҡала .. эш ҡайнай. Ян-яғы ҡып-ҡыҙыл булған мейестәргә күмер ташып өлгөртөп булмай.* А. Таһиров.

**КОШЕНИ́ЛЬ** [*рус.* ⟨ *фр.*] *и.* **1.** Ҡыҙыл буяу алына торған бер нисә төр бөжәктең дөйөм исеме.

**2.** Шул бөжәктең инәһендә була торған ҡыҙыл буяу.

**КОЭФФИЦИЕ́НТ** [*рус.* ⟨ *лат.*] *и.* **1.** Алгебраик аңлатмалағы һан йәки хәреф менән күрһәтелгән ҡабатлаусы.

**2.** Физик есемдең бер үҙенсәлеген билдәләй торған дәүмәл. *Киңәйеү коэффициенты. Ышҡылыу коэффициенты.*

**3.** Ниндәйҙер бер дәүмәлде ҡабатлап, тейешле дәүмәлде таба торған һан. *Ҡорамалдарҙы файҙаланыу коэффициенты.* ■ *Скважиналарҙың ремонт-ара осоро оҙайҙы, уларҙы эксплуатациялау коэффициенты күтәрелде.* „Совет Башҡортостаны“, 1986, 23 ғинуар.

♦ **Файҙалы эш коэффициенты** файҙалы эш күләменең юғалған энергия күләменә ҡарата булған нисбәте.

**КӨБӨ** *и.* **1.** Йүкә ағасының үҙәген соҡоп яһаған ҡоршауһыҙ бейек һауыт. *Ҡымыҙ көбөһө. Бешкәкле көбө. Көбө ыҫлау.* ■ *Тар көбөлә эсе ҡатыҡ бешеп торған Өмөгөлсөм, шишмә һыуы кушкас, тағы бер-ике гөбөрләтеп алды ла, ҙур ағас туҫтаҡты мөлдөрәмә тултырып айран алып килде.* З. Биишева.

**2.** *диал. ҡар.* **батман** 1.

**КӨБӨНКӘ** *и. диал. ҡар.* **бешкәк**[1].

**КӨБӨСӘК** *и.* Бәләкәй генә көбө. *Айран көбөсәге. Ҡапҡаслы көбөсәк.*

**КӨБӘК**[1] *и.* **1.** Атыу ҡоралының йәҙрә, пуляға йүнәлеш бирә торған ҡорос көпшәһе йәки торбаһы. *Мылтыҡ көбәге. Туп көбәге.* ■ *Тал араһында минометтар теҙелешеп ултыра. Уларҙың көбәктәре көнбайышҡа ҡаратылған.* Ә. Ихсан.

**2.** Самауырҙың утлы торбаһы. *Мәғфүрә .. самауырҙың тояҡтарын, ҡолаҡ төптәрен, боҫлоҡ тирәләрен һөрттө. Көбәгенә бер нисә тапҡыр өрөп ҡуйҙы.* Һ. Дәүләтшина.

**3.** Шахтаның ер өҫтөнә сығыу юлдары булған үҙәк өлөшө./ *Ҡолсобай / аҙ ғына хәл йыйғас, породалар тултырылған тачканы оло штректан көбәккә ҡарай һөйрәп алып китте.* Я. Хамматов./ Нефть скважинаһы үҙәге.

**КӨБӘК**[2] *и. ҡар.* **күбәк.**

**КӨБӘП** *и. ҡар.* **кәбаб.**

**КӨҘ** *и.* Йәй менән ҡыш араһындағы миҙгел. *Сыуаҡ көҙ. Көҙ көнө.* ■ *Ҡоштар китте .. Эйе, йәй үтте. Ҡуҙ алдында бына көҙ етте.* Ғ. Амантай. *Тағы килде бер көҙ .. Тағы бер көҙ ергә һипте алтын тәңкәләр.* Н. Нәжми./ *күсм.* Кешенең ҡартая, ҡарыуы бөтә башлаған сағы. *[Билалов:] Алтмыш йәш.. Нисек кенә тимә, алтмыш йәш инде ул. Ғүмер көҙө.* Д. Исламов.

♦ **Алтын көҙ** көҙҙөң тәүге сыуаҡ мәле, япраҡтар һарғайған саҡ. **Ҡара көҙ** көҙҙөң ҡар яуғанға тиклемге һуңғы осоро. *Ҡара көҙ етеп, Тимаш баярҙың ҡыр эштәре бөткәс, Хаммат менән Сәлимә ауылға ҡайтып килде.* З. Биишева.

● *Алтын көҙ арты һалҡын көҙ.* Әйтем. *Яҙ йәме сәскә менән, көҙ йәме көлтә менән.* Мәҡәл.

**КӨҘГӨ**[1] *и.* **1.** Сағылдырып күрһәтеү өсөн махсус эшкәртелгән шыма быяла. *Түңәрәк көҙгө. Ултыртмалы көҙгө. Көҙгөлө шкаф.* ■ *[Арыҫлангәли] тәҙрә төбөндә ултырған бәләкәс кенә көҙгөгә ҡарап, ҡалын ҡара сәстәрен артҡа тараны.* Ғ. Дәүләтшин. **Көҙгө кеүек [ялтырау]** бик ялтыр нәмәгә әйтелә. *Көҙгө кеүек ялтырап ятҡан күл.* ■ *[Егет] аяғына көҙгө кеүек ялтырап торған итек кейгән.* М. Тажи.

**2.** *күсм.* Кемдең йәки нимәнең дә булһа сағылышы. *Уҡытыусы — ауылдың да, халыҡтың да көҙгөһө ул.* М. Тажи.

**3.** *ҡорт.* Бал ҡортоноң ҡорһағындағы шыма төкһөҙ ере.

♦ **Күңел көҙгөһө** кешенең эске донъяһын, күңелен сағылдырған нәмә.

● *Дуҫ — дуҫтың көҙгөһө.* Мәҡәл.

**КӨҘГӨ**[2] *с.* Көҙ була торған, көҙ ваҡытына хас. *Көҙгө көн. Көҙгө ҡараңғы төн. Көҙгө һыуыҡ. Көҙгө ямғыр.* ■ *Япраҡ төшә ерҙәргә, көҙгө ҡаты елдәрҙе* (Халыҡ йырынан). **Көҙгө йөн** көҙ ҡырҡып алынған һарыҡ йөнө. **Көҙгө йәрминкә** көҙ ойошторолған йәрминкә. **Көҙгө һабан** яҙғылыҡ өсөн көҙ һөрөп ҡалдырыла торған һабан; туңға һөрөү. ■ *Иген йыйып алынған, келәткә һалынған. Көҙгө һабан һөрөлөп, арыш сәселгән.* Ғ. Дәүләтшин.

♦ **Көҙгө ашлыҡ** (*йәки* **арыш**) *ҡар.* **ашлыҡ.**

**КӨҘГӨЛӨК** *и.* Көҙгө көн, көҙгө ваҡыт. *Көҙгөлөккә утын әҙерләү.* // *Көҙгөлөк бесән.*

**КӨҘГӨЛӘНЕҮ** *ҡ.* Көҙгө һымаҡ булыу. *Көҙгө-*

*ләнеп туңған боҙ өҫтөндә ҡояш нурҙары уйнай.* З. Биишева.

**КӨҘЛӨК** *с.* Көҙ көнөнә етерлек. *Көҙлөк аҙыҡ. Көҙлөк бесән.*

**КӨҘЛӨКТӘ** *р.* Көҙ көнө, көҙ мәлендә. *Эшләштереп тағы көнлөктә ат алырмынмы әллә тигәйнем, насип булһа, быйыл көҙлөктә.* Ғ. Ғүмәр.

**КӨҘЛӘҮ** [1] *ҡ.* **1.** Ҡайҙа ла булһа көҙҙө үткәреү, көҙ уҙғанса тороу.

**2.** *иҫк.* Йәйләүҙән һуң ыҙмаға яҡыныраҡ күсеп, көҙгө һыуыҡҡа тиклем ятыу; көҙгө йәйләүҙә тороу. *Бер ырыу көҙләргә Эҫем буйына киткән.*

**КӨҘЛӘҮ** [2] *и.* Ыҙмаға ҡайтыр алдынан көҙ көнө торған урын; көҙгө йәйләү. *Көҙләү тирмәһе. Көҙләү яланы.* ■ *Йәйләүҙәге байҙар көҙгө бейә һауыу өсөн килеп-килтәндәрен көҙләүгә ҡалдырып, ыҙмаға күсеп ҡайтҡан.* М. Буранғол.

**КӨҘЛӘҮЕС** *и.* Көҙ тыуған бәрәс; бүлтерек.

**КӨҘӨК** *и.* Күңелде тынысһыҙлап, төйөн булып торған үкенес йәки шик. *Көҙөк булып ҡалыу. Күңелгә көҙөк итеү. Күңелгә көҙөк һалыу.* ■ *[Сафыят] уйланы-уйланы ла, Өфөлә туҡтап, Булатты эҙләргә булды. Күреп кенә булһа ла ҡайтайым, күңелемә көҙөк булып торор тине.* Ә. Вахитов.

**КӨҘӨКЛӘНЕҮ** *ҡ.* Шикләнеү, шик тотоу.

**КӨҘӨН** *р.* Көҙ көнө, көҙ булғас. *Көҙөн киткән ҡоштар ҡайта яҙын, йөҙөп сикһеҙ ғаләм юлында.* „Ағиҙел", 1966, № 12.

**КӨҘРӨ** *с.* Көмрәйеп торған, ҡалын, көмрө (елкәгә ҡарата). *Көҙрө елкәле, баһадир кәүҙәлеһен Юламанов .. таный алмай торҙо.* Н. Мусин.

**КӨҘРӨЙ** *с.* Тырпайып торған; тырпыҡ. *Көҙрөй мыйыҡ.*

**КӨҘРӘ** *с. ҡар.* **бөҙрә.**

**КӨҘРӘЙЕҮ** *ҡ.* **1.** Йыуан, йомро булып, тупайып тороу (елкә-яурынға ҡарата). *Көҙрәйгән елкәһе, төрһәйгән ерән мыйығы, тәкәббер ҡарашлы күҙҙәре менән ул [Собхан старшина] нәҫел үгеҙен хәтерләтә.* З. Биишева./ Көмрө булып ҡалҡып тороу, көмрәйеү (алыҫтан күренгән нәмәләргә ҡарата). *Көҙрәйеп ятҡан күк арҡаны елә-саба үтһәң көс була* (Халыҡ йырынан).

**2.** Ҡабарыу, тырпайыу (ит, бөйөр, бесәйҙәрҙең һырт, елкә йөнөнә ҡарата). *Бесәй көҙрәйеп, ыҫылдай башланы.*

**3.** *күсм.* Күкрәк киреп кәпәренеү; ҡуҡрайыу. *Бына Форсатов, күрше тауыҡтарын күргән әтәс кәүек, көҙрәйеп алға сыҡты.* Ә. Вәли. / Асыу белдереп ҡабарыныу, ҡурҡытырға тырышыу. *[Чарита — Томсонга:] Инвалидка ғына көҙрәймәһәң, башҡаларға хәлендән килмәй шул.* Ғ. Ғүмәр.

**КӨҘРӘЙТЕҮ** *ҡ.* Һырт йәки елкә йөнөн ҡабартыу, тырпайтыу (ит, бөйөр, бесәй һымаҡ йәнлектәргә ҡарата). *Эт, тирмә уртаһына сығып келәм өҫтөнә баҫа ла, йөндәрен көҙрәйтеп, һелкенергә тотона.* „Ҡуҙыйкүрпәс менән Маянһылыу". **Елкәне** (*йәки* **һыртты) көҙрәйтеү** асыу белдереп ҡабарыныу.

**КӨҘРӘЛӘҮ** *ҡ. ҡар.* **бөҙрәләү.**

**КӨҘӘЛЕҮ** *ҡ. төш. ҡар.* **көҙәү.** *Көҙәлгән тай. Көҙәлгән байтал.*

**КӨҘӘМ** *и. диал.* Көҙгө йөн. *Иҙәнгә күк ҡуйҙың көҙәменән баҫҡан кейеҙ йәйелгән.* Ғ. Дәүләтшин.

**КӨҘӘН** [1] *и.* **1.** Һыҫарҙар ғаиләһенә ҡараған, йомшаҡ оҙон йөнлө, затлы тиреле йыртҡыс йәнлек. *Аҡ көҙән. Ҡара көҙән. Көҙәнгә ҡарағанда шәшке тиреһе ҡыйбат йөрөй.*

**2.** *с. мәғ.* Шул йәнлектең тиреһенән тегелгән. *Көҙән бүрек.*

**КӨҘӘН** [2]: **көҙән йыйырыу** ҡул-аяҡ тартышыу (һыуыҡтан, берәй сирҙән һ. б.).

**КӨҘӘТЕҮ** *ҡ. йөкм. ҡар.* **көҙәү** 1.

**КӨҘӘҮ** *ҡ.* **1.** Яҙ көнө тай-тулаҡтың ял-ҡойроғон ҡыҫҡартып ҡырҡыу. *Әхмәттең башында ҡыҙыл түбәле ҡара папаха, өҫтөндә шинель, аҫтында ял-ҡойроғон көҙәгән, уйнап торған туры ат.* И. Көҫәпҡол.

**2.** *һөйл.* Остан ҡыҫҡартып ҡырҡыу, мөнтәү. *Сәсте көҙәп алыу.*

**КӨЖГӨ** *и.* Ҡабыҡ һыҙыра торған бәләкәй генә көрәк рәүешендәге таяҡ.

**КӨЖГӨТӨҮ** *ҡ.* **1.** *ҡар.* **көжгөү.**

**2.** *күсм.* Өшкөтөү, ҡурҡытып ҡыуыу; көшкөтөү (мәҫ. ҡоштарҙы, малды һ. б.).

**3.** *күсм.* Ҡотҡо биреү, ҡотортоу. *Халыҡты көжгөтөү.*

**КӨЖГӨҮ** *ҡ.* Таяҡ тығып төрткөләү; көргөү.

**КӨЖРӘЙЕҮ** *диал.* Шоҡрайыу.

**КӨЖӘЛӘ** *и. диал.* Көнйәлә.

**КӨЖӘР** *и. һөйл.* Бурыс ҡайтарғанда тулыһынса бирмәгән һаран кеше.

**КӨЗРӘЙТЕҮ** *ҡ. диал.* Секрәйтеү. *Байназаров башҡаларҙы көлөргә әҙерләп, күҙҙәрен көзрәйтеп, ҡарап сыҡты.* Ш. Янбаев.

**КӨЗӘЛӘ** *и.* **1.** Йәшкелт аҡ сәскәле, оҙонсараҡ япраҡлы, ҡыҙыл емешле тропик ағас.

**2.** Шул ағастың сәтләүегенән алынған ағыу. *[Шәрәфи] укшый-укшый йәп-йәшел үт ҡоҫа.. Теге эт старшина ысындан да көзәлә ҡушып [ит] һоғондорған шул.* Б. Бикбай.

**КӨЙ** *и.* **1.** Бер бөтөн йөкмәткегә эйә булған аһәңле тауыштар теҙмәһе. *Моңло көй. Башҡорт көйө. Бейеү көйө. Табын көйө. Яу көйө. Көй ыңғайы. Көй уйнау. Көй көйләү. Көй сығарыу.* ■ *Егеттәр яҙған һүҙҙәргә көй уйлап таба ҡыҙҙар.* С. Кулибай. *Алып бирсе, еңгә, ҡурайымды, „Кәкүк" кенә көйөн тартайым* (Халыҡ йырынан). **Ҡыҫҡа көй** йыш ритм менән ҡыҫҡа итеп йырлана торған көй. **Оҙон көй** һирәк ритм менән һуҙып йырлана торған көй. **Көйгә һалыу** шиғри әҫәрҙе көй менән йырлай торған итеү. **Көй күтәреү** йырлаусыны ҡеүәтләп, йыр ыңғайына тауыш биреү. *Ҡарттар геүләп көй күтәрҙе: «Ваһа икән, мәрҙәҫ! — Вәс-вәс-вәс!»* Һ. Дәүләтшина. **Көй яңыртыу** көй-йырҙы яңынан иҫкә төшереү. *[Муйылбикә: / Хәҙер бына һиңә көй яңырта торорға кәрәк. Эштән бушап күптән бирле йырлашҡан да юҡ.* Һ. Дәүләтшина./ Шиғыр ыңғайына килтерелгән аһәңле тауыш. *Мөнәжәт көйө.* ■ *Ғәйнулла нәҙек тауышын ҡорьән көйөнәрәк һалып һөйләй.* Һ. Дәүләтшина. / Бер ыңғай ғына сығып торған дауамлы тауыш. *Сепаратор көйө.*

**2.** Музыка ҡоралдарында: тауыш төҙөклөгө. *Скрипканың көйө юҡ.*

**3.** Ҡорал-ҡорамал һәм механизмдың төҙөклөгө. *Сәғәттең көйө киткән.*

**4.** *күсм.* Берәй нәмәнең ниндәй ҙә булһа бер тәртибе, ыңғайы, яйы. *Мин башымдағы уйҙарҙы боҙмаҫҡа тырышып барам. Мин шул көйҙәр көйөнә атлайым.* Д. Юлтый.

**5.** *күсм.* Күңел тоүәллеге, кәйеф. *Баланың көйө юҡ. Кешенең көйөн күреү. Эшләргә көй килеү.* ■ *Команданың көйө китә башланы. Балалар эшкә күңелһеҙерәк тотона.* Ф. Исәнғолов.

♦ **Аҡылға бер көй** *шул уҡ* **аҡылға бер төрлө** (*ҡар.* **аҡыл**). **Бер көйгә** *йәки* **бер көй менән** бер ыңғайға, үҙгәрешһеҙ. *Ат бер көйгә һалмаҡ ҡына юрта.* «Совет Башҡортостаны», 1967, 9 май. **Көй килеү** 1) йырларға тауыш килешеү; 2) йырларға дәрт уяныу. *Ай-һай ҙа ғына тимәй көйҙәр килмәй* (Халыҡ йырынан). **Көйгә килеү** ыңғайға килеү, ипкә килеү. **Көй кәрәк тә сөй кәрәк** киреләнгән, үпкәләгән кешегә әйтелә.

**КӨЙГӘ** *бәйл. ҡар.* **көйө.** *Был көйгә. Ҡайткан көйгә.*

**КӨЙГӘК** *с. ҡар.* **көйәлән.**

**КӨЙГӘЛӘК** *с. диал.* Көйәлән. *Көйгәләк кеше.*

**КӨЙГӘЛӘКЛӘНЕҮ** *к. диал.* Көйәләнеү.

**КӨЙГӘНӘК 1.** Ата ҡоштоң түшө аҡ буҙ, ҡанат остары ҡара булған, ҡарсығалар ғаиләһенә ҡараған йыртҡыс ҡош. *Баҫыу көйгәнәге. Һаҙ көйгәнәге. Ялан көйгәнәге.*

**2.** *диал.* Торомтай.

**КӨЙҘӨРГӨС** *с.* Үтә ҡыҙыу; яндарғыс. *Көйҙөргөс ел.*

♦ **Йән көйҙөргөс** асыуҙы килтергән, йәнгә тейгән кеше йәки нәмә; йән көйөгө.

**КӨЙҘӨРӨҮ** [1] *к.* **1.** Ут менән ҡара яндырыу; өтөү. *Икмәкте көйҙөрөп бешереү.*

**2.** Бик ныҡ ҡыҙҙырыу. *Көйҙөрөп .. барған ҡояш нурҙары аҫтында ураҡсылар бил яҙмай арыш ура.* Б. Хәсән./ Зәһәр нәмә менән өтөү. *Әсеүташ менән көйҙөрөү.*

**3.** *күсм.* Ныҡ тәьҫир итеп күңелде ярһытыу. *Ҡараш менән көйҙөрөп алыу.* ■ *[Емеш] йөрәген көйҙөрөп ятҡан хатты алып .. ҡараны: „Яратам!“* З. Биишева.

**4.** Бик ҡаты итеү, ҡара итеү (сәйгә ҡарата). *Көйҙөрә яһап сәй ултыртыу.*

**5.** Рухи ғазапҡа дусар итеү, ҡайғыртыу. *Бала көйҙөрә лә, һөйҙөрә лә.*

**КӨЙҘӨРӨҮ** [2] *к.* Аталыҡ енесе биҙҙәрен алып ташлау; бестереү. *Үгеҙҙе көйҙөрөү.*

**КӨЙҘӘҮ** *к.* Бойҙай йәки тарыны килелә төйөп, ҡабығын һыҙырыу. *Бутҡа бешерергә тип бойҙай көйҙәп алдым.* Һ. Дәүләтшина.

**КӨЙЛӨ** *с.* **1.** Көйгә һалып уҡый торған. *Көйлө китап./ һөйл.* Шиғырға һалынған. *Көйлө әҫәр.*

**2.** Көйгә килтерелгән (музыка ҡоралына ҡарата). *Гармун төҙөк, көйлө.*

**3.** *күсм.* Боҙоҡ түгел, төҙөк (ҡорал-ҡорамал һәм механизмға ҡарата). *Машиналар көйлө булғас, эш яҡшы бара.*

**4.** *күсм.* Ыңғайға, яйға килеүсән. *Көйлө бала.*

**5.** *р. мәғ.* Яҡшы, һәйбәт. *Эштәр көйлө бара. Машина көйлө эшләй.*

**КӨЙЛӘНЕҮ** *к.* **1.** *төш. ҡар.* **көйләү** 2, 3, 4. *Скрипка яҡшы көйләнгән.* ■ *Бында, сәскес көйләнеп еткерелмәгәнлектән, квадраттар дөрөҫ килеп сыҡмағайны.* Ә. Вәли.

**2.** Көйлө булыу, уйнарлыҡ хәлгә килеү (музыка ҡоралдарына ҡарата). *Мандолинаның ҡылын алыштырғас, көйләнде.*

**3.** Төҙөк хәлгә килеү, һәйбәтләнеү. *Мотор көйләнде. Күперҙе сыҡҡас юл көйләнде.*

**4.** *күсм.* Ыңғай төҫ алыу, булмышы яҡшырыу. *Эштәр көйләнде.* ■ *Әңгәмәнең көйләнеүенә шатланған Хәким Гөльямал әйткән һүҙҙе шунда уҡ ялып алды.* Я. Хамматов.

**5.** *күсм.* Көйгә килеү, әйткәнгә ыңғайлау. *[Көсәпколов] килеп ҡыҫылмаһа, бәлки, Буранбай көйләнеп тә киткән булыр ине.* Ф. Әсәнов.

**КӨЙЛӘП-СӨЙЛӘП** *р.* Төрлөсә әүрәтеп; алдаштырып. *Көйләп-сөйләп күндереү.*

**КӨЙЛӘТЕҮ** *к. йөкм. ҡар.* **көйләү.** *Көй көйләтеү. Машинаны көйләтеү.*

**КӨЙЛӘҮ** *к.* **1.** Көйгә һалып йырлау, көй уйнау. *Кил һин ҡаршыма, барыһын һөйләйем, һиңә ҡурайҙан бер көй көйләйем.* Д. Юлтый. *Үҙе лә генә һөйләй, үҙе көйләй, Ихсан сәсән кеүек ир ҡайҙа* (Халыҡ йырынан)./ Һүҙһеҙ йырлау. *Ауыҙ эсенән генә көйләү.* ■ *[Гөлйөҙөм] башта «Урал» көйөн әкрен генә, һүҙһеҙ генә, көңрәтеп көйләне.* Һ. Дәүләтшина./ Өндәрҙе билдәле бер ритм менән һуҙып әйтеү (һөйләү һ. б.). *Көйләп һөйләү. Көйләп уҡыу.* ■ *Новиковтың һүҙе араһында Карташов көйләп кенә: — Да.. да..— тип ҡуя ла тағы һыҙғырырға тотона.* Д. Юлтый. / Рифмаға һалыу, шиғри итеү. *Хәмит хатын көйләп яҙған.* Б. Бикбай.

**2.** Көйгә килтереү, көйөн төҙәтеү (музыка ҡоралдарына ҡарата). *Айыу бер көндө янды-бешеп — скрипкаһын көйләргә керешә.* Ғ. Ғүмәр.

**3.** Механизм, ҡорал кеүек нәмәләрҙе ҡарап, төҙәтеп тейешле кимәлгә килтереү, эшләрлек итеү; йүнәтеү. *Машинаны көйләү.* ■ *Халыҡ тырышып һабандарын, тырмаларын көйләй.* Й. Солтанов./ Ҡорал-ҡорамалды айырым бер эш өсөн ҡулайлау, яраҡлаштырыу. *Сәскесте тәрәнгә көйләү. Тирмәнде ваҡҡа көйләү.*

**4.** *күсм.* Бер ыңғайға, төҙөк бер тәртипкә килтереү, юлға һалыу. *Эште көйләү. Ашлыҡ ташыуҙы көйләп ебәреү.* ■ *Тауыҡ үҙенең аһ-зарын барҙы ҡаҙға һөйләргә. Табып тағы иптәштәр күмәк тормош көйләргә.* Ғ. Амантай./ *һөйл.* Өҫтәлгә ҡуйырға әҙерләү (аш-һыуға ҡарата). *Шәүрә ҡарсыҡ аш-һыу көйләй, ығы-зығы йөрөп тора.* Т. Арслан.

**5.** *күсм.* Йыуатып, әүрәтеп кешенең күңелен табыу. *[Атайым] кемдәргәлер янай. Әсәйем бер ишек төбөнә, бер атайым янына килеп, уны көйләй ине.* Д. Юлтый.

● *Баланы туҡмап йыуатма, көйләп йыуат.* Әйтем.

**КӨЙЛӘШЕҮ** *к. урт. ярҙамл. ҡар.* **көйләү** 2, 3. *Ашлыҡ һуҡҡыс машинаны көйләшеү.*

**КӨЙМӘ** *и.* **1.** Арба, сана йәки машина өҫтөнә ҡыуышлап ҡуйған япма. *Повозканың көймәһе артҡа ташлап асылған.* Һ. Дәүләтшина. *Кузовына брезенттан көймә ҡоролған автомашина елдерә.* Н. Мусин./ Ошондай япмаһы булған арба йәки сана. *Сигандар көймәһе.* ■ *[Тимерготло]*

*күк көймәгә аҫау торған айғыр мисәп, ҡанатлы ҡара юрға екмәк булған.* «Бабсаҡ менән Күсәк».

**2.** *кар.* **кәмә.**

**КӨЙМӘЛЕ** *с.* Кәймәһе булған; япмалы. *Көймәле арба. Көймәле сана.* ■ *Тройка ла еккән бирәү килә, тройкаһы ҡайыш көймәле.* (Халыҡ йырынан).

**КӨЙМӘЛӘТЕҮ** *к. йөкм. кар.* **көймәләү** 1.

**КӨЙМӘЛӘҮ** *к.* **1.** Көймә ҡуйыу. *Сана көймәләү.*

**2.** *күсм.* Ҡулды ҡаш өҫтөнә ҡуйып, күҙҙе ышыҡлау. *Ҡарт, уң усы менән күҙ өҫтөн көймәләп, күтәрелеп ҡара[ны].* Б. Бикбай.

**КӨЙӨ** *бәйл.* **1.** Төп килештәге исем, сифат, күрһәтеү алмашынан һәм үткән заман сифат ҡылымынан һуң килеп, ниндәй хәлдә, ни рәүешле булғанды белдерә; килеш. *Йәш көйө. Ошо көйө. Ултырған көйө.* ■ *Ҡай япраҡтар ҡырҡ ҡырау күрә, хатта шул сағында йәшел көйө туңып, бөгәрләнеп ҡала ботағында.* М. Кәрим. *Ҡарағаш.. Уралды һау-сәләмәт көйө күреп, шатлығынан илап ебәрҙе, ти.* «Урал батыр». *Һуғыш бөтә планды емерҙе. Мин төҙөлөш институтының бер курсын тамамлаған көйө тороп ҡалдым.* З. Биишева.

**2.** Мөмкинлек менән эш-ҡылыҡ араһындағы ҡаршылыҡты белдерә. *Ауырыу көйө. Йәштәр бар көйө.* ■ *Ҡарға көйө һандуғас мин тип йөрөү ул им түгел.* Ш. Бабич.

**3.** Бер эш-хәрәкәттең икенсе эш-хәрәкәт артынса уҡ башҡарылғанын белдерә. *Килеп ингән көйө эшкә тотоноу.*

♦ **Бер көйө** 1) бер ыңғай менән, үҙгәрешһеҙ. *Бер көйө йәшәп ятыу.* ■ *Ямғыр бер көйө .. илһамланған кеүек яуҙы ла яуҙы.* Р. Назаров; 2) хәл-әхүәл һорағанда яуап итеп әйтелә. — *Хәлегеҙ нисек? — Бер көйө.*

**КӨЙӨҘ** *и.* **1.** Өбөрөләп, биҙәкләп, йөндән һуҡҡан өй ҡаралдыһы; келәм; *Иҙән урындыҡҡа, һандыҡҡа ла аллы-гөллө көйөҙ түшәлгән.* З. Биишева.

**2.** *диал.* Аҫалы балаҫ.

**3.** *диал.* Суптарлап һуғылған шаршау йәки сымылдыҡ.

**КӨЙӨК** *и.* **1.** Ут тейеп көйгән нәмә йәки шуның көйгән өлөшө. *Икмәк көйөгө. Көйөк еҫе. Көйөк тәме.*

**2.** *күсм.* Рухи ғазап; ҡайғы. *Буранбай ҙа китте, иле ҡалды, илкәйенә булды ҙур көйөк* (Халыҡ йырынан).

♦ **Еңел көйөклө** юҡ ҡына сәбәптән көйөнә башлаған, кәүгәсел. *Хәйбулла ағай еңел көйөклө.., кеше сәнскеһенә тиҙ бирелә торған, гәрсел тәбиғәтле ине.* К. Мәргән. **Йән көйөгө** *кар.* **йән** 1. **Күҙ көйөгө** күҙ алдында булып йәнгә тынғы бирмәгән, борсоу һалған кеше йәки нәмә. *Яу ҡырҙарын ташлап ҡайтып килгәс, күҙ көйөгө булды үҙ балам.* Ә. Вахитов. **Ҡыҫыр көйөк** сәбәпһеҙ хәсрәт, юҡ ҡына бер көйөнөс. *Ҡыҫыр көйөккә көйөү.* **Тере көйөк** булдыҡһыҙ, меҫкен, йән үртәгес кеше. **Әҙәм көйөгө** үҙенең булмышы менән кешеләр борсолоу, үртәнеү хисе уятҡан кеше.

● *Бала көйөгө йөрәктә, ир көйөгө итәктә.* Мәҡәл. *Көйә кейемде ашай, көйөк кешене ашай.* Әйтем. *Әҙәм көйөгө булғанса, урман кейеге булған артыҡ.* Мәҡәл.

**КӨЙӨЛДӨ** *и.* Оҙон аяҡлы, оҙон төҙ нәҙек суҡышлы, һор сыбар төҫлө ҡош (йылға-күл буйында, һаҙамыҡ ерҙә йәшәй). *Ҙур көйөлдө.* ■ *Яланда, туғай буйында йүгереп йөрөй көйөлдө.* С. Кулибай.

**КӨЙӨМ** *и. диал.* Суйын һауыттың сатнаған ере.

**КӨЙӨНДӨРӨҮ** *к.* Борсолдороу, хафаға һалыу. *Бала бит ул илап көйөндөрә, көлөп һөйөндөрә.* Б. Бикбай.

**КӨЙӨНӨС** *и.* Борсолоу, әсенеү хисе. *Көйөнөс килтереү.* ■ *Юҡ бикләнеп йәшәмәм мин .. һөйөнөсөм дә, көйөнөсөм дә булыр тыуған тупрағымда.* А. Игебаев.

● *Эшләй белеп эшләгәнгә иген эше — кинәнес, эшләй белмәй эшләгәнгә иген эше — көйөнөс.* Мәҡәл.

**КӨЙӨНӨСЛӨ** *с.* Күңелгә борсоу һалған, ҡайғылы. *Көйөнөслө хәбәр. Көйөнөслө минуттар кисереү.*

**КӨЙӨНӨҮ** *к.* Тынысһыҙланып борсолоу, хафаланыу, ҡайғырыу. *Мәғфүрә Ҡотлоярҙан .. хат булмауына көйөнөп һөйләне.* Һ. Дәүләтшина. — *Ай, юҡты ғына һөйләйһегеҙ бит, балалар! —* тип көйөнгән әбей (Әкиәттән).

**КӨЙӨНСӘ** *бәйл. кар.* **көйө.**

**КӨЙӨНӘ** *бәйл. кар.* **көйө.**

**КӨЙӨҪ** *с.* Ҡабатланып торған, ваҡыт-ваҡыт булған (ел-ямғырға ҡарата). *Көйөҫ ел. Көйөҫ ямғыр.* ■ *Тау итәген шаян тулҡындар типкеләй, тау маңлайына көйөҫ елдәр һыйпалай.* Й. Солтанов.

**КӨЙӨҪ-КӨЙӨҪ** *р.* Ваҡыты менән, ҡабат-ҡабат. *Көйөҫ-көйөҫ яуған ямғыр.* ■ *Тәҙрәләр, көслө елдең өрөүенә .. көйөҫ-көйөҫ сыҡтырап китәләр.* Ғ. Дәүләтшин. *Нияз .. тархандарға баш эйеп, ҡул ҡаушырып торманы, көйөҫ-көйөҫ яу асты.* М. Буранғол.

**КӨЙӨҪЛӘҮ** *к.* Ҡабат-ҡабат булыу, ҡабаттан әйләнеп килеү (ел, ямғыр, һыуыҡ, һ. б. ҡарата). *Көйөҫләнеп иҫкән ел.*

**КӨЙӨҮ** *к.* **1.** Уттан ҡара яныу, янып тыштан ҡарайыу. *Утҡа көйөү. Көйгән икмәк.* ■ *Ҡуҙыйкүрпәс көл эсенән ҡара күмер булып көйгән сөсө икмәк табып алды, ти.* «Ҡуҙыйкүрпәс менән Маянһылыу». / Ҡыҙыу уттан һауыт төбөнә ҡатыу. *Бутҡа көйгән.*

**2.** Ҡыҙыулыҡ тәьҫиренгә кибеү. *Көнгә көйөү.* ■ *Өсөнсө ай инде ямғырҙар юҡ, иҫә афәт еле. Ерем көйә. Тик бер генә яуыр ямғыр булһам ине.* М. Кәрим. / *күсм.* Бик ныҡ һыуһау. *[Сәми] көндөң ҡыҙыуына ҡалды. Баҙарға килеп еткәндә .. ул шул тиклем көйгән ине ки, уға бер күл һыуы ла әҙ булыр төҫлө ине.* Д. Юлтый.

**3.** *күсм.* Рухи яҡтан ғазап сигеү; ҡайғырыу. *Йәшәйемсе ҡалған гүмерҙе лә һөйөп, янып, көйөп, юҡһынып.* Р. Сафин. *Янмаҫ инем, көймәҫ инем, йәремде ят һөймәһә* (Халыҡ йырынан). / Берәй кеше йәки нәмә өсөн борсолоу. *[Балалары] өсөн бик көймәй Сафура. Оло ҡыҙҙары .. үҙе әсә кеше.* Б. Бикбай. *Упҡындарҙы һикереп уҙам, ҡолар тиеп көймә, йәнем.* Р. Назаров.

**4.** *диал.* Асыуланып һүҙ әйтеү, әрләү. *Балаға*

*көйөү.* ■ *Бик кәйефһеҙ, эсем бошкан сакта, бәлки, юкка һиңә көйөрмөн. Быndaй хәлдә үкһеп илама тик, мин бер көйһәм, мең кат һөйөрмөн.* С. Кулибай.

♦ **Кара** (*йәки* **каралай) көйөү** 1) үтә нык кибеү, короу. *Сәсеүлектәр кара көйөп ултыра;* 2) бик нык күгәреү (тәнгә карата). *Күҙ төбө каралай көйгән.* ■ *[Баланың] ирендәре кара көйөп, сабыртып сыкты.* М. Тажи; 3) кара төҫкә ингәндәй булыу, үҙгәреү (төҫ-сырайға карата). *Асыуҙан кара көйөү.* ■ *Кара кайғыларҙан кара көйөп, калдык көлгә, калдык күмергә.* А. Игебаев. **Эс-бауыр көйөү** оҙак, ауыр кисереүтән тәкәтһеҙ булыу. *[Шәфәк:] өс йыл буйы көтә-көтә эс-бауырҙарым көйөп бөттө инде.* М. Кәрим. **Эс көйөү** *шул ук* **эс көтөрләү** (*кар.* **эс**).

**КӨЙӨШ** *и.* Айыры тояк малдың (сусканан башка) карынынан кире сығарып көйшәгән аҙығы. *Һыйыр .. буфф итеп тын ала ла, тағы үҙенең көйөшөн көйшәй башлай.* Һ. Дәүләтшина. **Көйөш кайтарыу** көйөштө кикереп сығарыу. *Һыйыр көйөш кайтара алмай, зыянлап куйҙы.*

**КӨЙӨШЛӨ: көйөшлө мал** йоткан аҙығын кире сығарып көйшәй торған мал.

**КӨЙРӘК** *с. диал.* **1.** Кабыккан. *Көйрәк ситса.*

**2.** Көйәлән. *Көйрәк кеше.*

**КӨЙРӘЛЕҮ** *к. кар.* **көйрәү.**

**КӨЙРӘТЕҮ** *к.* **1.** Быҙлатып яндырыу, куҙландырыу. *Усакты көйрәтеү.* ■ *Йырыма .. кешене һөнәргә өйрәт, тимен, тимерлектә тимерсенең усагын көйрәт, тимен.* М. Кәрим.

**2.** *һөйл.* Быҙлатып тартыу (тәмәкегә карата). *Өс ауылдаш окоп төбөнә сүгәләп алган да өҙлөкһөҙ көйрәтәләр.* Д. Исламов.

**3.** *күсм.* Нык кайғыртыу, әсендереү.

● *Дуҫ илатып өйрәтер, дошман көлдөрөп көйрәтер.* Мәкәл.

**КӨЙРӘҮ** *к.* **1.** Ялкынланмай куҙланып яныу. *Аҫтан көйрәп яныу. Усак көйрәй.* ■ *Сытыр-сытыр итеп көйрәгән самауыр тауышы .. өй эсенә бер йән бирә.* Б. Ишемғолов. / *күсм.* Көслө тойғо менән яныу. *Йөрәк көйрәй.* ■ *Сәлих маладис ул. Уның янында булғанда һүнергә етешкән кешеләр ҙә көйрәп китә.* Х. Ибраһимов.

**2.** Кыҙыулыктан кибеп короу. *Кола дала! Йәйен үлән көйрәй, күҙгә керһәң — баткак, кышта — йот.* Р. Бикбаев.

**3.** *күсм.* Тышка бәреп сыкмай, көслө булып күңелдә йәшәү (уй, тойғо һ. б. карата). *Ысын мөхәббәт, күбеһенсә, төтөнһөҙ-ниһеҙ генә йөрәктең иң төбөндә көйрәй башлай.* Р. Ғабдрахманов. **Эстән көйрәү** һиҙҙермәй, эстән кайғырыу; яныр-көйөү. *[Гөлзифа:] Һин бына тешеңде кыҫ та, ауырлыкка түҙә бел, тышка сыгармай кара. .. Сабыр кеше эстән көйрәй.* Б. Бикбай.

**КӨЙСӨ** *и.* Көй сығарыусы. *Уралып-яткан Уралда .. йырсынан йыр йырлатып, көйсөнән көй көйләтеп.., йыйылып ултырыр карттар бар* (Кобайырҙан).

**КӨЙСӨЛ** *с.* Йырға әүәҫ, йырға оҫта булған. *Көйсөл кеше.*

**КӨЙСӘ** *р. диал.* Көйө.

**КӨЙҺӨҘ** *с.* **1.** Көйгә килтерелмәгән, көйө боҙолған (музыка коралына карата). *Көйһөҙ пианино.*

**2.** *күсм.* Төҙөк түгел, көйө киткән (корал-корамалға карата). *Көйһөҙ мотор.*

**3.** *күсм.* Төҙөк тәртибе булмаған, яйһыҙ (эшкә, тормошка карата). *Көйһөҙ донъя.*

**4.** *күсм.* Ыңғайға килмәй торған, гел кәйефһеҙ мыжык. *Көйһөҙ бала.*

**5.** *күсм.* Ел-ямғырлы, йонсоу, боҙок (көнгә карата). *Быйылгы яҙ үҙен бигерәк тә көйһөҙ, кырыҫ тота.* «Совет Башкортостаны», 1965, май.

● *Көйһөҙ кейәүгә ай ҙа ярамай, көн дә ярамай.* Әйтем.

**КӨЙҺӨҘЛӨК** *и.* **1.** Холоктағы кирелек, мыжыклык.

**2.** *күсм.* Ел-ямғырлы, йонсоу булған хәл. *Тәбиғәттең көйһөҙлөгө эшкә нык камасаулай.*

**КӨЙҺӨҘЛӘНЕҮ** *к.* **1.** Көйө боҙолоу (музыка коралына карата). *Гармун көйһөҙләнгән.*

**2.** Көйө китеү, төҙөклөгө бөтөү, боҙолоу (механизм, корал-корамалдарға карата). *Тәүҙә домна мейесе нормаль эшләне. Ләкин икенсе көндө көйһөҙләнә башланы.* «Әҙәби Башкортостан», 1957, № 1.

**3.** *күсм.* Төҙөк тәртибе, ыңғайы боҙолоу (эшкә, тормошка карата).

**4.** *күсм.* Кәйефһеҙгә әйләнеү, кәйефһеҙ булыу; мыжыкланыу. *Нуркин көйһөҙләнгән Әминәне йыуатырга тип, Бикәләр булмәһенә килеп инде.* Ғ. Ғүмәр.

**5.** *күсм.* Ел-ямғырлыға, йонсоуға әйләнеү; боҙолоу (көнгә карата). *Быйыл тәбиғәт көйһөҙләнде. Яҙ һуңлап килде, һалкын булды.*

**КӨЙШӘЛӘҮ** *к. диал.* Шөйтөләү.

**КӨЙШӘМ** *и.* **1.** Сәйнәрлек аҙык.

**2.** *диал.* Көйөш.

**КӨЙШӘМЛЕ: көйшәмле мал** *шул ук* **көйөшлө мал** (*кар.* **көйөшлө**).

**КӨЙШӘНДЕРЕҮ** *к. һөйл.* Әҙ генә ашатыу; капкылатыу. / *Сәлмән — йорт хужаһына:] Мөмкин булһа, үгеҙҙе көйшәндереп алырга ине* (Әкиәттән).

**КӨЙШӘНЕҮ** *к.* **1.** Яйлап, үҙ алдына көйшәү. *Юл буйында һыйыр һарыктар көйшәнеп ята.* М. Тажи.

**2.** *һөйл.* Яй ғына сәйнәү, ашаныу. *[Егет] көйшәнеп ултырган килеш .. аланлап ялан ягын байкай.* Ж. Кейекбаев.

**КӨЙШӘР: көйшәр хайуандар, көйшәрҙәр** *зоол. кар.* **көйшәүселәр.**

**КӨЙШӘҮ** *к.* **1.** Йоткан аҙыкты кире сығарып сәйнәү (көйөшлө малға карата). *Һыйырҙар көйшәгәне, һирәк-һаяк .. кола бейәнең бышкырганы ишетелә.* В. Әхмәҙиев.

**2.** *һөйл.* Оҙак итеп, яйлап ашау. *Икмәк көйшәү.* ■ *Кола кашка рәхәтләнеп бесән көйшәй.* С. Кулибай.

♦ **[Ете кат] ер аҫтында йылан көйшәгәнен белеү** (*йәки* **ишетеү**) *кар.* **йылан.**

**КӨЙШӘҮСЕЛӘР** *и. зоол.* Тояклылар отрядына караған хайуандар төркөмө.

**КӨЙӘ** [1] *и. зоол.* **1.** Карышлауығы йөн әйберҙәрҙе, ашлыкты кайһы бер үҫемлектәрҙең япра-

ғын һ. б. ашай торған ваҡ ҡына күбәләк һәм уның ҡарышлауығы. *Тополь көйәһе. Балауыҙ көйәһе. Иген көйәһе. Көйә ҡарышлауығы. Көйә күбәләге. Кейемгә көйә төшкән. Шәлде көйә ҡырҡҡан.* / *һөйл.* Онда була торған ваҡ ҡына ҡуңыҙ һәм уның ҡарышлауығы, ҡорт.

**2.** *диал.* Ҡарғаяҡ

**КӨЙӘ** ² *и.* Төтөн тейгән нәмәләгә йоҡа ғына ҡором. *Ҡаҙан көйәһе.*

**КӨЙӘҘ** *с. диал.* Ыҫпай, ҡупшы. *Көйәҙ кеше.* ‖ *Көйәҙ йөрөү. Көйәҙ кейенеү.*

♦ **Көйәҙ турғай** *ҡар.* **ҡупшыҡай** ².

**КӨЙӘҘЛӘНЕҮ** *ҡ. диал.* Ҡупшыланыу.

**КӨЙӘК** *и.* Тейешһеҙ ваҡытта артылмаһын өсөн һарыҡ-кәзә тәкәһененең бауыр аҫтына бәйләй торған кейеҙ.

**КӨЙӘЛӘН** *с.* Тиҙ генә янып, көйөп, ҡайғырып барыусан. *Көйәлән кеше.*

**КӨЙӘЛӘНДЕРЕҮ** *ҡ.* Борсолорға, бошонорға мәжбүр итеү; хафаландырыу.

**КӨЙӘЛӘНЕҮ** *ҡ.* Һәр төрлө сәбәптән янып-көйөп, хәсрәткә бирелеү; хафаланыу.— *Ямғыр, ямғыр кәрәк. Юғиһә ашлыҡ харап була,— тип көйәләнә [Баттал].* Ш. Насыров.

**КӨЙӘЛӘҮ** ¹ *ҡ.* Көйә ¹ төшөү. *Быйма көйәләгән. Он көйәләгән.*

**КӨЙӘЛӘҮ** ² *ҡ.* Көйә ² тейҙереү, көйәгә буяу. *Ҡулды көйәләү.*

**КӨЙӘНТӘ** *и.* **1.** Ике башына күнәк, кәрзин элеп, яурынға күтәреп йөрөү өсөн бөгөлгән ағас. *Биҙәкле көйәнтә. Көйәнтә башы.* ■ *Зөлхизә .. биҙәкле күнәктәрен аҫып, селтәрле көйәнтәһен көйәнтәләп, түңәрәк ҡыуаҡҡа һыуға килгән.* Н. Иҙелбай.

**2.** Ҡуш күнәк менән ташыған нәмәләрҙе үлсәү берәмеге. *Ике көйәнтә балсыҡ.* ■ *Фатима йүгерә-атлай Акселәндән дүрт көйәнтә һыу килтерҙе.* Б. Бикбай.

**3.** *тук.* Көрөҫ элә торған таяулы арҡыры ағас (киндер урынының бер өлөшө).

**4.** Төрлө ҡорал-ҡорамалдың уртанан нығытып ике башына ауырлыҡ һала торған таяҡ рәүешендәге өлөшө. *Бизмән көйәнтәһе.*

♦ **Көйәнтә алыу** ҡул араһына инеп, эшләшә, ярҙамлаша башлау (ҡыҙ балаға ҡарата). *Яңы ғына инем ҡолонсаҡ, көйәнтәләр алыуым яңы саҡ* (Халыҡ йырынан).

**КӨЙӘНТӘЛӘҮ** *ҡ.* Көйәнтәгә (**1** мәғ.) элеп күтәреү. *Көйәнтәләп пар силәкте һылыуҙар һыуға барған.* С. Ҡулибай.

**КӨЙӘНӘК** *с. ҡар.* **көйәлән.**

**КӨЙӘРМӘН** *и.* Спорт ярышын яратҡан, уның барышы һәм ундағы уңыштар менән ныҡ ҡыҙыҡһынған кеше.

**КӨКӨРТ** *и.* Химик элемент, һары, төҫтәге тиҙ тоҡаныусан матдә (техника, медицина һәм ауыл хужалығында ҡулланыла). *Көкөрт газы.*

♦ **Көкөрт водороды** төҫһеҙ һаҫыҡ газ.

**КӨКӨРТЛӨ** *с.* Составында көкөрт булған, көкөрт ҡатнашҡан. *Көкөртлө металдар. Көкөртлө нефть.*

**КӨЛ** *и.* Ниҙер янғандан ҡалған күкһел һоро төҫтәге онтаҡ. *Ҡайын көлө. Усаҡ көлө. Самауыр көлө. Тәмәке көлө. Усаҡтың көлөн алыу. Көл йыйыу. Көл менән ашлау.* ■ *Камил .. балыҡтарҙың эсенә тоҙ һипте лә берәм-берәм япраҡҡа төрөп, көлгә күмде.* Ф. Иҫәнғолов.

♦ **Артыңа көл** ҡабат килеп күренмә тигән мәғәнәлә әйтелә. **[Артынан] көл һибеп ҡалыу** яратмаған кешенең киткәненә ҡыуанып, бүтән килеп күренмәүен теләү. **Көл булыу** *йәки* **көлгә әйләнеү** юҡҡа сығыу. **Көлгә аунаһын, көнөн күрһен** зыяны теймәһә, теләһә ни эшләһен, тигән мәғәнәлә әйтелә. *[Әбей — Сәлимәгә:] Ҡуй, балам, юҡты һөйләмә. Көлгә аунаһын, көнөн күрһен, тигәндәр, кешелә ни эшең бар.* Һ. Дәүләтшина. **Көл итеү** юҡҡа сығарыу, ҡырып бөтөрөү. *Дошмандарҙы көл иттек.* **Көлөн күккә осороу** 1) үртәп, юҡҡа сығарыу. *Әбей батшаның ғәскәре ауылға ут һалып, көлөн күккә осороп киткән.* З. Биишева; 2) донъя йөҙөнән юҡ итеү. **Көтә-көтә көл булыу** бик оҙаҡ көтөп арыу. *[Мәрйәм:] Ҡыҙҙар көтә-көтә көл булды инде, әйҙә киттек!* Ш. Янбаев. **Ҡабырғаһы (*йәки* ҡабырғаң) менән көл ташытырмын** янағанда әйтелә. **Һәр кем үҙ икмәгенә көл тарта** үҙ файҙаһын ҡараған кешегә әйтелә.

**КӨЛГҮМЕС** *и. диал.* Көликмәк.

**КӨЛДӨКСӘ** *и.* Усаҡ, мейестең алды. *Сыуал көлдөксәһе.* ■ *[Гөльямал] аҡ балсыҡ иҙеп, сыуалын, усағын, көлдөксәһен ағартты.* Я. Хамматов. **Көлдөксә ағасы** мейес ҡаҙнаһының көлдөксә аҫтындағы таҡтаһы.

**КӨЛДӨРӨҮ** *ҡ.* **1.** Көлөргә мәжбүр итеү. *[Индрил] үҙенең бөтмәҫтөкәнмәҫ анекдоттары менән һалдаттарҙы көлдөрә.* Д. Юлтый.

**2.** Күҙгә, йөҙгә йылмайыу төҫө сығарыу. *Айбулат .. ҡара күҙҙәрен көлдөрөп, Васяға текләй.* Һ. Дәүләтшина.

♦ **Әҙәм көлдөрөү** кеше көлкөһөнә ҡалыу. *Егерме биш йыл бергә ғүмер иткәс, әҙәм көлдөрөп, айырыл имеш [тип уйланды Сафура]* Б. Бикбай.

**КӨЛДӨРТӨҮ** *ҡ. ҡар.* **көлдөрөү.**

**КӨЛИКМӘК** *и.* Көлгә күмеп бешергән сөсө икмәк. *Юлсы төргәгән асып, үлән өҫтөнә йәйеп һалды ла, юлға алып сыҡҡан көликмәген һындырып, ҡарһаланып ашарға тотондо.* С. Ҡулибай.

**КӨЛКӨ** *и.* **1.** Ниҙелер ҡыҙыҡ, ирмәк күргәндә уянған тойғо. *Көлкө килеү.* ■ *Кәрим Саматты тағы шаяртырға, үсекләргә иткәйне, балыҡты күреп ҡалғас, көлкөһө юғалды тегенең.* Ж. Кейекбаев. / *с. мәғ.* Шул тойғоно уятырлыҡ; ирмәк, ҡыҙыҡ. *Көлкө һүҙ. Көлкө булыу.* // *Көлкө тойолоу. Көлкө табыу.*

**2.** Кешенең берәй ҡыҙыҡтан көлөүе. *Кинәт кенә көлкө башлана. Береһе башлай, икенсеһе ҡушлай, экиәттәргә экиәт ялғана.* Ғ. Мәсғүт.

♦ **Көлкөгә алыу** ысынды бушҡа, мәрәкәгә ауҙарыу. **Көлкөгә ҡалыу** кеше көлөрлөк хәлгә төшөү. *Гел маҡталып кил-кил дә, бөтә колхоз алдында көлкөгә ҡал, имеш, [тип уйланы Иргәле].* Н. Мусин. **Көлкө кисәһе** шаян номерҙарҙан торған кисә. **Көлкөгә һабыштырыу** ысынды көлкөгә әйләндереү. *Берәй һүҙенән насар һөҙөмтә сыҡһа, Томинко уны, көлкөгә һабыштырып, тиҙ генә ҡаплай белә.* Д. Юлтый. **Көлкө түгел** эште уйынға алмаҫҡа, уның етдилегенә иғтибар итергә өндәгәндә әйтелә. **Көлкөһөн (*йәки* көлкөңдө) яңыртырмын** янағанда әйтелә. **Көлкөң**

**яңырыр әле** көлгән кешегә иҫкәртеп йәки янап әйтелә. **Әҙәм көлкөһө** кеше ғәйепләрлек, мыҫҡыллап көлөрлөк эш, нәмә йәки кеше. *Әҙәм көлкөһөнә ҡалыу.* ■ *Трактористар .. зар илай: ягыулыгын алып килһә, һыуы юк, һыуы булһа, ягыулыгы юк. Әҙәм көлкөһө.* «Совет Башҡортостаны», 1965, 28 февраль.

● *Ауырыу көлкө һөймәҫ.* Әйтем.

**КӨЛКӨЛӨ** *с.* Көлкөнө килтерерлек; ҡыҙыҡ. *Көлкөлө хикәйә.*

**КӨЛКӨНӨС** *с. диал.* Көлкө.

**КӨЛ-КҮМЕР** *и. йыйн.* Янған, үртәлгән нәмәнең ҡалдығы. *Немецтар аяҡ баҫкан урында .. көл-күмер генә ҡала.* Х. Мохтар.

♦ **Көл-күмер булыу** *йәки* **көл-күмергә ҡалыу** 1) бөтөнләй янып бөтөү; 2) юҡҡа сығыу.

**КӨЛЛӨ** [*гәр.*] *билд. а.* Барлыҡ, бөтә, һәммә. *Көллө кеше. Көллө мал.* ■ *Йәндәреңә нәмә теләйһең — табып була бында көллөһөн.* Ә. Атнабаев. *Донъя малы өсөн ҡайғырмайым, көллө ағзаларым һау булғас* (Халыҡ йырынан).

**КӨЛЛӨК** *и.* Мейестең, самауырҙың көл төшә торған аҫҡы селтәрле өлөшө.

**КӨЛЛӨКСӘ** *и. диал.* Көлдөксә.

**КӨЛНӘС** *с. диал.* Көләс.

**КӨЛӨК** *и. диал.* Ҡыҙыл шәшке.

**КӨЛӨМЙӨҮ** *ҡ.* Яғымлы итеп, саҡ ҡына йылмайыу; мөләйем генә көлөмһөрәү. *Көлөмйөп ҡарау. Көлөмйөп һөйләшеү.* ■ *Тамаҡ туйғас, балалар көлөмйөп уйнап ҡалдылар.* Ғ. Дәүләтшин.

**КӨЛӨМҺӨРӘҮ** *ҡ.* Саҡ ҡына көлөү, сырайға көлөү билдәһе сығарыу. *Көлөмһөрәп ҡарау.* ■ *Сәңгелдәктә ята көлөмһөрәп алма кеүек матур йәш бала.* Ғ. Әмири.

**КӨЛӨНӨС** *с. кар.* **көлкөлө.**

**КӨЛӨНСӘК** *и. кар.* **көлкө.** *Юлдаш булһаң иренсәккә, ҡалаһың икән көлөнсәккә.* Ғ. Ғүмәр.

**КӨЛӨҮ** *ҡ.* **1.** Ҡыҙыҡ күргән, шатланған саҡтағы тойғоно күҙ-йөҙ һәм үҙенсәлекле өҙөк-өҙөк тауыш аша сағылдырыу. *Ихахайлап көлөү. Илағансы көлөү. Кеткелдәп көлөү. Ҡыҫҡырып көлөү. Тыйыла алмай көлөү. Шыңғырлатып көлөү. Шырҡ итеп көлөү. Ысын күңелдән көлөү.* ■ *Көлгәндә .. уның [Ғәләүҙең] тотош кәүҙәһе, хатта танау тишектәренә тиклем кинәнеп көлә, тауышы бөтә тирә-яҡты яңғырат[а].* Б. Бикбай. **Һын** (*йәки* **эс**) **ҡатып көлөү, эс тотоп** (*йәки* **тырнап**) **көлөү** 1) тыйыла алмай бик ныҡ көлөү. *Атайым бер һүҙен дә асыҡлап әйтә алмай, эсе ҡатып көлә.* С. Кулибай; 2) берәй эш-ҡылыҡ йәки һүҙҙән бик ҡаты көлөү. / Асыу, мыҫҡыл кеүек тойғоно күҙ-йөҙ һәм үҙенсәлекле өҙөк-өҙөк тауыш аша сығылдырыу. *Мыҫҡыллап көлөү. Үсәшеп көлөү.* / Күңелдәге тойғоно күҙ-йөҙ, ирендәр хәрәкәте менән тауышһыҙ ғына белдереү. *Йылмайып көлөү. Мыйыҡ аҫтынан көлөү. Көлөп һөйләшеү.* ▭ *Зәйнәп менән .. иҫәнләштек, көлөп ҡул бирҙе.* Ғ. Сәләм. **Ауыҙ йырып** (*йәки* **теш ыржайтып**) **көлөү** кешенең урынһыҙ көлөүенә ҡарата әйтелә.

**2.** Кемдеңдер эш-ҡылығынан, төҫ-ҡиәфәтенән ҡыҙыҡ йәки сәбәп табып мыҫҡыл белдереү йәки шаяртыу. *Кешенән көлөү. Көлөп һөйләү. Дуҫтарса көлөү. Көлөү — сатираның иң көслө ҡоралы.* ■ *Мин тинем: «Иптәш, улар минән түгел, һинән көлә. Күркә төҫлө ҡыланышың һәм дә фәсеңдән көлә».* Ш. Бабич.

**3.** *күсм.* Нур һибеү, балҡыу (ай, ҡояш, йондоҙҙарға ҡарата). *Ҡышҡы ҡояш көлөп торһа ла, йылыһы юҡ.* Ш. Янбаев. / Йәмле, матур булыу. *Убаларҙың ҡояшҡа ҡараған биттәре .. яңы ғына сыҡҡан бүтәгәнән йәшәреп, көлөп тора.* Ғ. Дәүләтшин. / Йәтеш, килешле булыу (кейемгә ҡарата). *Кейеме үҙенә килешеп, көлөп тора.*

♦ **Бер** (*йәки* **уң**) **күҙе көлгәндә, икенсеһе** (*йәки* **һул күҙе**) **илай** ихласлығы ысын күңелдән булмаған кешегә ҡарата әйтелә. **Бот сабып көлөү** кемдеңдер эш-ҡылығынан, һүҙенән бик ҡаты, ныҡ көлөү. *Улар [ауыл кешеләре] Әхмәҙиҙең судта һөйләгән һүҙенән бот сабып көлдө.* Ж. Кейекбаев. **Шайтан көлә** (*йәки* **көлөр**) берәй эш-ҡылыҡ йәки һүҙҙең мәғәнәһеҙлеген белдереү өсөн әйтелә. *Был һүҙеңдән шайтан көлөр.*

● *Кешенән көлмәк — үҙеңә килмәк.* Әйтем. *Эшләргә иренгән, көлөр ерҙә көрһөнгән.* Мәҡәл.

**КӨЛӨШӨҮ** *ҡ. урт. ҡар.* **көлөү** 1. *Ен ҡыҙҙары төндә күгәрсен булып сығалар ҙа, супырлашып, көлөшә-көлөшә һыу инәләр* (Әкиәттән).

**КӨЛПӘС** *с. диал.* Ҡупшы.

**КӨЛСӘ** *и.* **1.** Әсе ҡамырҙан табала бешергән йәймә. *Юлдаш өләсәһенең ҡаймаҡ һалып яһаған ҡуйы сәйен, майға бешергән көлсәһен бик ярата ине.* З. Биишева.

**2.** *диал.* Көликмәк.

**КӨЛ-ТАЛҠАН** *и. йыйн.* Янып, емерелеп, туҙанға әйләнгән нәмә. *Көл-талҡан итеү.* ■ *Яуҙар килһә Рәсәйгә, башҡорт мендә толпарын. Ул белдә хас дошмандарын көл-талҡандай онтарын.* Ҡ. Даян.

**КӨЛТАРБА** *и. диал.* Көлтә арбаһы (*ҡар.* **арба**).

**КӨЛТӨР-КӨЛТӨР** *оҡш.* Ҡор уйнаған тауышты белдергән һүҙ. *Көлтөр-көлтөр итеү.*

**КӨЛТӨРӘҮ** *ҡ. диал.* Дөһөрләү. *Кук көлтөрләй.*

**КӨЛТӘ** *и.* **1.** Иген, етен, тармаларҙың билдәле бер сама менән яһалған бәйләме. *Арыш көлтәһе. Етен көлтәһе. Тары көлтәһе. Көлтә бәйләү. Көлтә йыйыу. Көлтә ташыу. Көлтә эҫкертләү.* ■ *Эй урҙың һин, ярһып-ярһып урҙың, усмаларҙан булды көлтәләр. Көлтәләрҙән ҙурат ҡуйылды, ҙураттарҙан кәбән ҡойолдо.* М. Кәрим. **Көлтә бауы** көлтәне бәйләгән һалам бау. *Йәнйегет йәшкелтерәк бойҙайҙы йолҡоп алып көлтә бауҙары яһай.* Ғ. Дәүләтшин. **Көлтә ултыртыу** бер нисә көлтәне бергә ҡуйып, баштарын икенсе көлтә менән ябыу. **Көлтә һалыу** көлтәләрҙе башы менән эскә ҡаратып билдәле бер тәртиптә өйөү. *Көлтәне ҙуратҡа һалыу. Көлтәне ҡырлыҡҡа һалыу.* / Үҫемлек, сәскәләрҙең ҙур бәйләме; шәлкем. *Бер көлтә сәскә.* / *күсм.* Өйкөмләнеп торған нур, саткы. *Нур көлтөһе.* ■ *Баҫыуҙы дүрт яҡлап ут ураткан. Өйөрөлөп-өйөрөлөп ут көлтәләре яна.* Т. Килмөхәмәтов.

**2.** *с. мәғ.* Ҙур булып ялбырлап торған. *Көлтә сәс.* ■ *Аргымаҡтар .. киң күкрәкле, бейек мундалы, көлтә ҡойроҡло аҡбуҙ толпарға әйләнгән дә ҡуйған* (Әкиәттән).

♦ **Көлтә арбаһы** *ҡар.* **арба.**

● *Ураҡсыының елкәһенә ҡарама, көлтәһенә ҡара.* Мәҡәл.

**КӨЛТӘЛӘҮ** *к.* Көлтә итеп бәйләү. *Игенде яландан көлтәләп ташып һыртҡы ырҙынға өйҙөләр.* Һ. Дәүләтшина.

**КӨЛҺЫУ** *с.* Көл төҫлө, күкһел буҙ. *Көлһыу сәс. Көлһыу тупраҡ.* / Төҫһөҙ, нурһыҙ (йөҙгә ҡарата).

**КӨЛӘЙҘӘҮ** *к. диал.* Көләмһерәү.

**КӨЛӘКӘЙ** *с. кар.* **көләкәс.**

**КӨЛӘКӘС** *с.* Көлөргә яратыусан; уйынсаҡ, шаян. *[Өммөкәй — Йәнеш хаҡында:] Был ҡыҙ шаян, көләкәс булмаҡсы. Әсәһе кеүек томһа булмаҫ был.* З. Биишева.

**КӨЛӘМӘЙЛӘҮ** *к.* Күҙгә, төҫкә көлөү, йылмайыу ғәләмәте сығарыу (хайуандарға ҡарата).

**КӨЛӘМӘС** *и.* Тапҡыр мәғәнәле, ҡыҫҡа ғына көлкөлө әҫәр. *Халыҡ көләмәстәре. Көләмәс һөйләү.* ■ *[Ғилажи] Хужа Насретдин көләмәстәрен һөйләп, ҡыҙылармеецтарҙы көлдөрә ине.* А. Таһиров.

**КӨЛӘМӘСЛӘҮ** *к.* Ҡыҙыҡ һүҙ менән шаяртыу. *Бер шаяны һөттө һемерә-һемерә әбейҙе көләмәсләй: «Рәхмәт, әбей, инде ҡыҙыңды ла бирһәң..»* Д. Исламов.

**КӨЛӘНЕС** *с. диал.* Көлкө. *Көләнес хәл.*

**КӨЛӘПӘ** *и. диал.* Көләпәрә.

**КӨЛӘПӘРӘ** *и.* **1.** Иңгә төшөп торған киң елкәле, киң ҡолаҡлы буҫтау башлыҡ (күберәк һалдаттар кейгән). *Үрге баҫҡыста өҫтөнә килешле һоро шинель, башына йондоҙло көләпәрә кейгән .. урта буйлы бер кеше тора ине.* З. Биишева.

**2.** Плащ башлығы. *Ҡапыл күк күкрәй. Гөлназ сумаҙандарын ҡуйып, плащының көләпәрәһен кейә.* И. Абдуллин.

**КӨЛӘС** *с.* **1.** Көлөп, йылмайып торған; яҡты, асыҡ. *Көләс йөҙ. Көләс кеше. Көләс булыу.* ■ *Айһылыуҙың йөҙө яҙғы күк йөҙө кеүек көләс ине.* З. Биишева. / Көлөргә яратыусан. *[Ғилажи — Сара хаҡында:] Көлһөн, көлһөн, ундай һылыу ҡыҙҙарҙың көләс булғаны яҡшы. Улар көләслектәре менән донъяны матурлай.* А. Таһиров.

**2.** *күсм.* Йәмле, матур. *Көләс донъяның иң өҫтөнә, нурлы йондоҙ итеп, беҙ күтәрҙек [ижадты].* Р. Ниғмәти.

**КӨЛӘСЛЕК** *и.* **1.** Йөҙҙәге көләс төҫ, яғымлылыҡ. *Хәйретдиновтың асыҡ сырайы боҙолдо. Көләслеге бөттө.* А. Таһиров.

**2.** *күсм.* Йәмләп торған төҫ, матурлыҡ. *Һуңғы йылдарҙағы үҫеш ауылым йөҙөнә нур өҫтәгән, көләслек биргән, күҙгә күрһәтеп йәшәрткән.* Ф. Исәнғолов.

**КӨЛӘСЛӘНЕҮ** *к.* Көләскә әйләнеү, көләс төҫ алыу. *Зәки менән Ҡәйюм карттың йөҙө Ғатауллиндың һүҙенән көләсләнеп китте, бүлмә яҡтырғандай булды.* С. Агиш.

**КӨЛӘСЛӘТЕҮ** *к.* Яғымлы, көләс итеү. *Лида Кинйәголға ҙур зәңгәр күҙҙәрен тағы ла ялтыратып, йөҙөн көләсләтеп .. ҡараны.* А. Таһиров.

**КӨЛӘСӘ** *и. диал.* Көлсә.

**КӨЛӘСӘР** *с. диал.* Көләкәс. *Был хәлдең шаһиты булған көләсәр Зиһникамал менән бәләкәс Хәсән өй яңғыратып шарҡылдап көлөп ебәрә.* Х. Мохтар.

**КӨМБӘ** *и. диал. кар.* **ҡырлыҡ**[1] 2.

**КӨМБӘҘ**[1] *[фарс.] и.* **1.** Ярымшар рәүешендә ҡабарып, түңәрәкләнеп торған түбә. *Тирмә көмбәҙе.* ■ *Ағастар араһынан төрлө биҙәкле таштарҙан эшләнгән көмбәҙ, манаралар күренә башланы.* Н. Нәжми.

**2.** *күсм.* Ҡатлаулы тау тоҡомдарының көмрөләнеп ятҡан урыны. *Ер аҫтында .. көмбәҙҙәр бар. Уларҙың аҫтында һыу йыйыла, ә һыу өҫтөндә нефть була, тағы ла өҫтәрәк газ була.* Ә. Бикчәнтәев.

**КӨМБӘҘ**[2] *[фарс.] и.* **1.** Еҙ йәки ҡалайҙан көмрө итеп биҙәкләп һуҡҡан тәңкә һымаҡ биҙәү әйбере. *Көмбәҙ баҫыу.* ■ *Еңгәләре [Фатиманың] .. муйынына һумлыҡтар, көмбәҙҙәр баҫылған, мунсаҡ менән ҡайылған һаҡал таҡты.* Ж. Кейекбаев.

**2.** *диал.* Балыҡ тәңкәһе.

♦ **Күк көмбәҙе** *кар.* **күк**[3] 1.

**КӨМБӘҘЛЕ** *с.* Көмбәҙ[2] баҫылған, көмбәҙҙәре булған. *Көмбәҙле елән. Көмбәҙле ҡашмау.*

**КӨМБӘҘЛӘНЕҮ** *к.* Көмбәҙ[1] һымаҡ булыу. *[Юлдың] бер яғында алыҫҡа-алыҫҡа күгелйем тауҙар һуҙылып китә. Икенсе яғындағы .. киң туғайҙа .. бесән кәбәндәре көмбәҙләнеп ултыра.* Ғ. Ғүмәр.

**КӨМБӘҘЛӘҮ** *к.* Түңәрәкләп, көмбәҙ һымаҡ итеү. *Һарайҙың буталлап, көмбәҙләп алтын менән япҡан түбәләрендә ҡояш яҡтыһы мең төрлө нур сәсеп, күҙҙең яуын алып тора.* З. Биишева.

**КӨМӨЗ** *с.* Ҡулбаштарын алға сығара биреп, иңкәйеп йөрөүсән; көмрө. *Көмөз кеше.*

**КӨМӨРСӘЙ** *с. диал. кар.* **көмрө** 1.

**КӨМӨШ** *и.* **1.** Химик элемент, йылтыр аҡ төҫтәге затлы металл (төрлө биҙәү әйберҙәре, һауыт-һаба, аҡса һ. б. яһау өсөн ҡулланыла). *Көмөш рудаһы. Көмөш сыңы. Көмөш төҫөндәге. // Көмөш балдаҡ. Көмөш ҡалаҡ. Көмөш миҙал. Көмөш уҡа.* ■ *Урал тауҙың аҫтында тимер ҙә, көмөш тә бар; Урал тауҙың өҫтөндә һуғыш та үлеш тә бар* (Ҡобайырҙан). **Көмөш һалыу** (*йәки* **сабыу**) көмөш менән биҙәкләү. *Егет кенә булһаң, һин егет бул, көмөш һалдыр ҡайыш йүгәнгә* (Халыҡ йырынан). **Көмөш ялатыу** берәй нәмәнең өҫтөнә йоҡа ғына итеп көмөш яғыу.

**2.** Шул металдан йәки уның ҡатышмаһынан ҡойолған аҡса. *Ун тин көмөш. Илле тин көмөш. // Көмөш аҡса. Көмөш тәңкә. Көмөш сулпы.* ■ *[Байға] иген иктем билде бөкрәйтеп, ун тин көмөш алып айына.* Я. Ҡолмой. *[Еләндең] салғыйҙарына, бөйөрҙәренә .. ҡаҙаған унар, ун бишәр тинлек көмөш тәңкәләр генә, үҙҙәренең тәүге төҫтәрен һалмай һаман ялтырап торалар.* Ғ. Дәүләтшин.

**3.** *күсм.* Кем йәки нимәнелер яҡшы тип баһалағанда әйтелә (күберәк алтын менән сағыштырып ҡулланыла). *Әй, Ҡәләнфер, көмөш тимен тырнағыңды, ҡәләнферҙең һабағы тим бармағыңды.* Ш. Бабич. *Телмәрҙәре — ялҡын, ә шулай ҙа һүҙе көмөш булһа, өндәшмәүе — алтын.* Ғ. Рамазанов. *Беребеҙ алтын, беребеҙ көмөш, ҡайҙан килеп табыштыҡ* (Халыҡ йырынан).

**4.** *күсм.* Төҫө, ялтырауы менән ошо металды хәтерләткән нәмә. *Сәстәге көмөштәр. // Көмөш нурҙар. Көмөш сәс. Көмөш ысыҡ. Көмөш башлы ҡылған.* ■ *Бына Себер киңлегенең көмөшө — тайга энәләрен күмгән ҡар.* Р. Ниғмәти. *Тышта аңҡый яҙ һауаһы, яуа көмөш тамсылар.* Х. Кәрим.

**5.** *с мәғ. күсм.* Саф, таҙа (йылға, һыуға ҡарата). *Көмөш һыулы шишмә.* ■ *Хәрәкәтһеҙ ята торғас, күл һайыҡҡан.., көмөш һыуын сайҙар баҫҡан.* Ғ. Әмири. / Саф, яңғырауыҡлы (тауышҡа ҡарата). *Зәйтүнә бөтә уйын-көлкө, күңел асыуҙарҙы ойоштороусы булып китте, кистәрен урман буйында уның көмөш тауышы яңғыраны.* Ә. Хәкимов. *Алып килдем һиңә.. йылҡыларҙың көмөш кешнәүҙәрен, тауҙар ярып аҡҡан һыу тәмен.* Х. Ғиләжев. **Көмөш кеүек (йәки һымаҡ), көмөштәй** берәй нәмәнең төҫөн, таҙалығын, тауыш сафлығын сағыштырып биреү өсөн ҡулланыла. *Көмөш кеүек аҡ. Көмөш кеүек саф.* ■ *Ҡыҙыл алма эйәгең, саф көмөштәй һөйләүең.* Салауат Юлаев. *Таштан ташҡа һикереп, көмөш кеүек шылтырап.., Ағиҙел ята алдында.* «Аҡбуҙат».

◆ **Көмөш туй** *ҡар.* **туй. Өлөшөнә тейгән көмөшө** яҙғаны шул, тигән мәғәнәлә күңел тынысландырыу өсөн әйтелә.

● *Баҡырҙы күпме ағартһаң да, көмөш булмаҫ.* Мәҡәл. *Кем сәсендә көмөш бар, ул да булһа бикәгә.* Әйтем.

**КӨМӨШКӘ** *и.* Өйҙәге ябай ысул менән ҡыуып алынған иҫерткес эсемлек. *Көмөшкә ҡайнатыу. Көмөшкә ҡыуыу.* ■ *Тимеркәй көмөшкәне берме-икеме генә уртланы ла уҡшып .. иҙәнгә төктө.* Д. Исламов.

**КӨМӨШЛӘНЕҮ** *ҡ.* **1.** *төш. ҡар.* **көмөшләү.**

**2.** Көмөш һымаҡ йылтыр аҡ булыу. *Күлдең уртаһына тиклем тау күләгәһе һуҙыла, күләгә менән ҡапланмаған өлөшө көмөшләнеп күренә.* Ғ. Хәйри.

**3.** *күсм.* Аҡ төҫкә инеү; ағарыу. *Көмөшләнә сикә сәстәр көн һәм сәғәтләп. Ҡартлыҡ шулдыр. Ә башҡаса ниндәй сәбәптән?* М. Тажи.

**КӨМӨШЛӘТЕҮ** *ҡ. йөкм. ҡар.* **көмөшләү.**

**КӨМӨШЛӘҮ** *ҡ.* **1.** Көмөш ялатыу. *Самауыр көмөшләү.*

**2.** Көмөш менән биҙәкләү. *Башыңдағы йүгәнеңде көмөшләрбеҙ, юрғам; ҡара ҡырпыу үңлегеңде нағышларбыҙ, юрғам* (Халыҡ йырынан).

**КӨМӨШСӨ** *и.* Алтын-көмөш нәмәләр эшләү оҫтаһы. / *иҫк.* Алтын-көмөштән эшләнгән аҫыл нәмәләр һатыусы.

● *Көмөш ҡәҙерен көмөшсө белер.* Әйтем.

**КӨМӨШСӨЛӨК** *и.* Көмөшсө булып эшләү, көмөшсө эше. *Йәшерәк саҡта уның атаһы .. көмөшсөлөк итә. Беләҙек, йөҙөк, сулпы кеүек нәмәләр ҡойоп, яһап, көн күрә.* А. Таһиров.

**КӨМПӨЛ** *и. диал. ҡар.* **гөмбөр** [2].

**КӨМРӨ** *с.* **1.** Дуғаланып сығып торған, кәкрәйеп ҡалҡып торған. *Көмрө таҡта. // Танауҙың көмрөһө.* ■ *Ослo ярғаҡ бите, көмрө танауы уға [Ғиндуллаға] уҫал кеше ҡиәфәте бирә.* Н. Мусин.

**2.** Яурыны, елкәһе сығыңҡырап, дуғаланып торған. *Көмрө кеше. Көмрө елкә.* / *и. мәғ.* Яурындың дуғаланып сығып торған ере. *Көмрөһө сыҡҡан ҡарт.*

**3.** *диал.* Бөкрө, бөкөс.

**КӨМРӘ** *и. диал. ҡар.* **көмбәҙ** 2.

**КӨМРӘЙЕҮ** *ҡ.* **1.** Көмрө (1 мәғ.) булыу. *Көмрәйеп торған танау.*

**2.** Көмрөгә (2 мәғ.) әйләнеү. *Йәш Миңлеғәли, ғүмер буйы кешегә эшләп арҡаһы көмрәйгән атаһы артынан пароходҡа барып инде.* Ә. Ихсан. / Арҡаны дуғаландырыу; көмрө итеү. *Көмрәйеп ултырыу.* ■ *Малдар көмрәйеп кенә эсергә бара.* Ғ. Хәйри.

**КӨМРӘЙЕШЕҮ** *ҡ. урт. ҡар.* **көмрәйеү** 2.

**КӨМРӘЙТЕҮ** *ҡ.* Көмрөгә (2 мәғ.) әйләндереү. *Ауыр эш көмрәйтте.*

**КӨМРӘНЛӘҮ** *ҡ.* Көмрәйеп хәрәкәтләнеү, тынмай йөрөп ятыу (оло кешеләргә ҡарата). *Көмрәнләп эшләп йөрөү.*

**КӨМҺӘНЛӘҮ** *ҡ. диал.* Көмрәнләү.

**КӨМӘСТӘҮ** *с. диал.* Ҡалтайған, салыш (тәгәрмәскә ҡарата). *Көмәстәү тәгәрмәс.*

**КӨМӘСТӘҮЛӘҮ** *ҡ. диал.* Ҡалтайыу, салшайыу (тәгәрмәскә ҡарата).

**КӨН** [1] *и.* **1.** Ҡояш сыҡҡандан байығанға тиклемге ваҡыт, иртәнән алып кискә тиклемге ваҡыт. *Ҡыҫҡа көн. Көн буйы. Көн уҙаға. Көн үткәреү.* ■ *Беҙ таш юл буйынан көн барабыҙ, төн барабыҙ. Ҡайҙа туҡталырбыҙ — билдәле түгел.* Д. Юлтый.

**2.** 24 сәғәтте эсенә алған ваҡыт берәмеге; тәүлек. *Бер көн. Һәр көн. Көн һайын. Өс көн элек.* ■ *Алты йыл, аһ! Һәр йылың өс йөҙ ҙә алтмыш көн бит ул.* Ш. Бабич. *Дүртенсе көнгә сыҡҡас, өс көн буйы керпек тә ҡаҡмаған Ҡыҙрас йоҡлап китә* (Әкиәттән). **Көн тәүлеге** көн буйы, бер тәүлек буйы. *[Гөлйөҙөм — Айбулатҡа:] Һине көн тәүлегенә бер күреп булмай китә бит.* Һ. Дәүләтшина. / Билдәле бер эш-хәлгә бәйле булған шул ваҡыт араһы. *Баҙар көнө. Байрам көнө. Туй көнө. Ял көнө.*

**3.** Айырым бер ваҡиғаға бағышланған дата. *Ҡатын-ҡыҙҙар көнө. Матбуғат көнө.*

**4.** Алдан билдәләнгән йәки ни менәндер билдәле булған мәл. *Көткән көн. Юлға сығыр көн.* ■ *[Үмәр:] Йә, һин һуң, Тимерғәли ағай, ошо хәбәрҙе ишетә тороп, нишләп әллә ҡасан килеп әйтмәнең? Хәҙер көнө еткәс килеп һөйләйһең.* Һ. Дәүләтшина. *[Туҡтамышев — Ырыҫҡолға:] Беҙ һинең урмандағы ҡылыҡтарыңды ла онотманыҡ әле. Көнө килер.* Б. Бикбай.

**5.** Билдәле бер миҙгел. *Йәй көнө. Яҙ көнө. Көҙгө көн.* ■ *[Аҡназар:] Көн ҡорола баҙарға барып ҡалырға кәрәк. Көҙ көнөн белмәҫһең, йә бысратып-нитеп ебәрер.* Ғ. Дәүләтшин. *Арыш баш ҡоҫҡан көндәр — йылдың иң матур көндәре.* Ф. Иҫәнғолов.

**6.** Кеше ғүмеренең билдәле бер ваҡыты; саҡ. *Балалыҡ көндәре. Ҡартайған көндә.* ■ *Ул даулы, ҡанлы, ҡара ҡайғылы ҡараңғы көндәрен Бәҙерғол хәҙер бик хәтерләргә теләмәй. Йөрәге өшөй.* Ғ. Хөсәйенов. *Ҡарт көндәрендә быларҙың [әбей менән бабайҙың] бер улы булған, ти* (Әкиәттән). / Нимәнеңдер булған, йәшәгән ваҡыты. *Көндәре һанаулы ҡалды инде ҡарҙың. Ул хәҙер селтәрләнеп бөттө.* Б. Бикбай. **Көнө бөтөү**

1) ғүмере бөтөү; 2) кәрәклеге бөтөп, ҡулланылмау. *Иҫкелектең көнө бөттө. Көн йылытты, тундың көнө бөттө.*

**7.** Тормош, көнкүреш. *Зарлы ғүмер инде кире ҡайтмаҫ, аҡ көн килде хәҙер ярлыға.* Ҡ. Даян. *[Әсәһе Һабраууға:] Башлы-күҙле булып, көнөбөҙҙө үҙ ҡулыңа алһаң, мин, исмаһам, ейән-ейәнсәрҙәр үҫтерер инем* Ә. Хәкимов. / Тыныс, рәхәт, уңайлы тормош. *Көн булмау. Көн бирмәү. Көн күрһәтмәү. Көн юҡ.* **Көн бөтөү** 1) тыныс, рәхәт тормош, иркенлек бөтөү; 2) ҡулланылыштан сығыу, кәрәклеге бөтөү. *Һанаға көн бөттө.* ■ *Өйрәнсектең балсыҡ көршәктәренә көн бөткән. Инде уларҙы һатып алыусы түгел, буш алыусы ла булмаған.* З. Биишева. / Иркен, рәхәт йәшәр заман. *Бына шулай йәшәп ятҡанда, донъя йөҙөн таң ҡалдырып, революция булып киткән. Егет, донъя минеке, минең көн килде, тиғән.* Ә. Вахитов.

□ **Көн итеү** етешһеҙ тормошта йәшәү, ярлы тороу. *Бабай һалабаш батырған, йүкә ишкән, септә һуҡҡан, әбей йөн теткән, еп иләгән, шулай итеп көн иткәндәр, ти улар* (Әкиәттән).

◆ **Алдырыр көн яҙҙырыр** берәй күңелһеҙ эштең башланыуына уйламаҫтан үҙең сәбәпсе булғанды белдергәндә әйтелә. **Бер көн** бер ваҡыт, бер заман. *Шул япраҡкайҙарҙың араһынан атып сыҡты бер көн аҡ сәскә.* Ш. Бабич. **Ирекһеҙҙән көнөнән** *йәки* **ирекһеҙ көндән** башҡаса мөмкин булмағандан; аптырағандан. *[Күрәҙә:] Мин, ҡустым, ирекһеҙҙән көнөнән күрәҙә исеме алып йөрөнөм. Хәҙер ташланым.* Я. Хамматов. **Кешә көнлө** *ҡар.* **кеше.** **Көнгә ярау** кәрәккә ярау. *[Колҡай — Зөлхизәгә:] Ас миңә лә шул сереңде, бәлки бер көнөңә ярармын.* Н. Иҙелбай. **Көндөкө көнгә** көнлөк бер эш йәки нәмәнең шул көн эсендә ғәмәлгә инеүен белдергәндә әйтелә. *Көндөкө көнгә бөтөү.* **Көн дә** көн һайын, һәр ваҡыт. **Көндәрҙең көнө булғанда** берҙән-бер заман. *Барына ла күнерһең. Көндәрҙең көнө булғанда, динеңә лә керерһең.* М. Буранғолов. **Көндәрҙән бер көн(дө)** берҙән-бер заман, бер ваҡыт. *Көндәрҙән бер көн, Бабсаҡтың үлтереләүенә ете ай тулғанда, Йәмиләнән бер ир бала тыуа.* «Бабсаҡ менән Күсәк». **Көн иртә** алдан уҡ, көн элек. *[Ҡарамырҙа:] һәләтләгеҙ, түйҙың эше бөтһөн, ҡунаҡ килмәҫ борон, көн иртә.* Х. Ғәбитов. **Көн кеүек асыҡ** берәй эш-хәлдең булыу-булмауы яҡшы билдәле икәнен белдергәндә әйтелә. *Был көндө бер кем дә керпек тә ҡаҡманы. Атака башланасағы һәр һалдатҡа көн кеүек асыҡ ине.* Ғ. Ибраһимов. **Көн күреү** йәшәү; донъя көтөү. *Михнәт менән көн күргәнсе, яуҙа үләйек дан менән.* Салауат Юлаев. **Көн ҡалыу** тормошта берәй кеше йәки нәмәгә ҡарап ҡалыу, унан башҡа сараһыҙ булыу. *[Тимер — Булатҡа:] Һин ҡойроғоңдо борғолама, инмәйһең икән колхозға, инмә, һиңә ҡалған көн юҡ.* Б. Бикбай. **Көнө бер** (кире мәғәнәләге хәбәр менән) шул көнө үк, бик тиҙ. *[Китапты] көнө бер генә китап итеп сығарыуы мөмкин түгел.* «Совет Башҡортостаны», 1968, 13 август. **Көн төшөү** берәүҙең ярҙамына мохтаж булып ҡалыу. *[Мәғфүрә:] Һүҙемде тыңла, Айбулат, бар. Көнөң төшһә.., яттарға ла инәләһең ул. Былар әле, нисек әйтһәң дә, үҙеңдекеләр.* Һ. Дәүләтшина. **Көн тәртибе** йыйылышҡа тикшереү өсөн ҡуйылған мәсьәләләр. *Клубта йыйылыш бара. Көн тәртибендә бер генә мәсьәлә — йәйге-көҙгө эштәрҙең үтәлешен йомғаҡлау.* Ф. Лоҡманов. **Көн үҙәгендәге** ошо мәлдә иң мөһим булған. *Көн үҙәгендәге мәсьәлә.* **Көн элек** (*йәки* **элгәре, борон**) ваҡытынан алда, алдан уҡ. *Көн элгәре әҙерләп ҡуйыу.* **Күрер көнөм бар икән** ҡайғылы йә шатлыҡлы бер хәлгә төшкәндә әйтелә. *— Эйе, был шатлыҡты ла күрер көнөм бар икән,— тип ҡыуанды Юламан ҡарт.* З. Биишева. **Ҡара көн** тормоштоң ауыр, ҡыйын ваҡыты. **Оҙайтылған көн** тәрбиә эшен яҡшыртыу ниәтендә уҡыусы балаларҙы дәрестән һуң эш көнө бөткәнсе уҡытыусылар ҡарамағында тотоу тәртибе. *Мәктәп оҙайтылған көнлө. Балалар иртәнге сәғәт һигеҙҙән киске сәғәт етегә тиклем шунда була.* «Совет Башҡортостаны», 1968, 10 сентябрь. **[Ошо, шул, был] көнгә ҡалыу** (*йәки* **төшөү**) берәй ҡыйын, ауыр хәлгә дусар булыу. *[Үмәр:] Башта уҡ әҙәмгә һанап, [Ныяҙғол] үҙе яусылатҡан булһа, был көнгә, был хурлыҡҡа төшмәй инек.* Һ. Дәүләтшина. *Йөрәк инде, бер ҙә харап, сығып килә, нигә генә килдем тигән көнгә төштөм.* Т. Йәнәби. **Көнө бөгөн түгел** ниҙелер бик эшләрҙәй булып та, әлегә сара йәки форсат юҡлығын белдереү өсөн әйтелә. **Поляр көн** *ҡар.* **поляр 1.** **Үҙ көнөңдө үҙең күреү** кешегә һалышмай, үҙ алдыңа, үҙ көсөң менән йәшәү. *[Йәнмырҙа — балаларына:] Инде ир еттегеҙ, үҙ көнөгөҙҙө үҙегеҙ күрерлек, үҙ алдығыҙға донъя көтөрлөк булдығыҙ* (Әкиәттән). **Хеҙмәт көнө** *ҡар.* **хеҙмәт.** **Һиңә** (*йәки* **уға**) **көнөң ҡалмаһын** берәүҙең насарлығын күрһәткәндә әйтелә. **Эт көнө** йәбер-золом күп булған ауыр тормош. *Эт көнөндә йөрөү.* **Эттән көн күреү** бик ауыр шарттарҙа йәшәү. **Эш көнө** *ҡар.* **эш.** **Әхирәт көнө** *ҡар.* **Әхирәт**[1]. **Яҡты көн** матур, рәхәт тормош. *Хан менән ханшаға бик ауыр булды.. Яҡты көндәре ҡара* көнгә әүерелде. «Ҡуҙыйкүрпәс менән Маянһылыу».

● *Кешегә ҡалған көнөң, таң атмаған төнөң.* Мәҡәл. *Кеше көнөн кеше белмәй.* Әйтем. *Көнләксегә көнөң төшмәһен.* Әйтем. *Ҡара көнөңдә ҡарға алдына үләкһә һорап барырһың.* Мәҡәл. *Һыйлы көнөң һыйырҙа.* Әйтем. *Берҙең көнө ил менән, илдең көнө ер менән.* Мәҡәл. *Эшләмәһәң эш көнө, ни ашарһың ҡыш көнө.* Мәҡәл. *Ялҡауға көн дә байрам, көн дә түй.* Мәҡәл.

**КӨН**[2] *и.* **1.** Ҡояш. *Көн нуры. Көн байыу. Көн тыуыу.* ■ *Көндөҙ ҡуҡҡә көн ҡалҡһа, көмөштәй балҡый Урал тау.* Салауат Юлаев. *Ай менән көндөң үлгәне — тонйорап байып барғаны* (Ҡобайырҙан). **Көн кәртәләнеү** *шул уҡ* **ҡояш кәртәләнеү** (*ҡар.* **ҡояш 1**). **Көн ҡолаҡланыу** *шул уҡ* **ҡояш ҡолаҡланыу** (*ҡар.* **ҡояш 1**). **Көн тотолоу** *шул уҡ* **ҡояш тотолоу** (*ҡар.* **ҡояш 1**).

**2.** Ҡояш нуры, ҡояш эҫеһе. *Көнгә бешеү.* ■ *Көнгә сығып бағыр гөл сәскәләр, ҡаш һикертеп, көләп ҡарарҙар.* Б. Вәлит. **Көн ашау** ҡояшҡа уңыу. **Көн бите** (*йәки* **битләүе**) көнгә ҡаршы ятҡан яҡ. *Сейә көн битен ярата.* **Көн һуғыу** (*йәки* **тейеү**) ҡояш эҫеһенең зарары тейеү. *Көнө буйы ялан баш йөрөп көн һуҡҡан.*

◆ **Бер бите ай, бер бите көн** ҡатын-ҡыҙҙың

матурлығын аңлатҡан һүҙ. *Бер бите ай, бер бите көн кеүек һылыу был ҡатындан ул тыуған, уға Заятүләк тип исем ҡушҡандар.* «Заятүләк менән Һыуһылыу».

**КӨН** [3] *и.* Билдәле бер ваҡыттағы һауа хәле. *Аяҙ көн. Болотло көн. Бысраҡ көн. Йонсоу көн. Көндәр боҙолдо. Көн һурыкты.* ■ *Көн матур, бер аҙ яр ситенә сығып йөрөйөк, тиештек.* Т. Йәнәби. *Һыуытыбыраҡ торған көн төшкә табан ҡапыл йылытты.* Я. Хамматов.

♦ **Көн асылыу** аяҙытыу. **Көн һындырыу** ҡаты һыуыҡтан һуң йылытыу. *Март башы. Көн ҡапыл һындырҙы.* Ф. Исәнғолов.

**КӨНАҪ** *и. диал.* Гонаһ.

**КӨНБАҒЫШ** *и.* **1.** Ҡатмарлы сәскәлеләр ғаиләһенә ингән, орлоғонан май алына торған, оҙон һабаҡлы, таҡыя башлы, һары сәскәле үсемлек. *Көнбағыш башы. Көнбағыш сәскәһе. Көнбағыш һабағы. Көнбағыш баҫыуы.* ■ *Тәҙрәбеҙгә ҡарап уйға сумған еҙ керпекле һылыу көнбағыш.* Ғ. Дәүләтов.

**2.** Шул үсемлектең орлоғо. *Ҡурған көнбағыш. Көнбағыш еме. Көнбағыш ҡабығы. Көнбағыш майы. Көнбағыш ярыу.*

**КӨНБАЙЫШ** *и.* **1.** Көнсығышҡа ҡапма-ҡаршы ятҡан, ҡояш байыған тараф (донъя тарафтарының береһе). *Көнбайыш еле. Көнбайыш яғы.* ■ *Беҙ биш-алты саҡрым киткәс, таң беленде. Әллә баш әйләнгәнгә инде, таң көнбайыштан беленгән кеүек булды.* Д. Юлтый. *Ул [Иҙел] көнбайышҡа юл тотто, ти.* «Урал батыр».

**2.** (*баш хәреф менән*) Көнбайыш Европа, Көнбайыш Европа илдәре. *Көнбайыштан килгән мода. Көнбайыш әҙәбиәте классиктары.*

**КӨН-БАЙМАН** *и. йыйн.* Тыныс тормош. *Яуыз рус түрәләренән, башҡорт старшиналарынан ярлы-ябағаға көн-байман юҡ.* Ғ. Хөсәйенов.

**КӨНГӨРӘ** [*рус.* кенгуру ⟨ *ингл.*] *и.* Артҡы аяҡтары оҙон, алғы аяҡтары ҡыҫҡа булған, һикереп хәрәкәт итеүсе, муҡсалы имеҙеүсе хайуан (Австралияла йәшәй). *Көнгөрә балаһы. Инә көнгөрә.*

**КӨНДӨ** *р.* Билдәле бер көндө; көнө. *Бер көндө Юламан ҡарт, гәҙәтенсә, таңдан тороп диңгеҙ ярына килгән.* З. Биишева. *[Бүре:] Анау көндө .. инәйемде көтөүсе туҡмап китте* (Әкиәттән).

**КӨНДӨҘ** *р.* Иртә менән кис араһындағы ваҡытта, көн яҡты саҡта. *Яҙ яҡынлай. Көндөҙ эҫе.* Ғ. Сәләм.

● *Көн күрмәгән көн күрһә, көндөҙ сыра яндырыр.* Мәҡәл.

**КӨНДӨҘГӨ** *с.* Көндөҙ булған. *Көндөҙгө аш. Көндөҙгө поезд. Көндөҙгө сәғәт өс. Көндөҙгө күбәләктәр.* ■ *Бөгөн көндөҙгө ял ваҡытында тоттом да хәбәр һалдым.* С. Агиш.

**КӨНДӨҘГӨЛӨК** *и.* Көндөҙгө ваҡыт. *[Фатима:] Ҡуй инде, бик мәшәҡәт икән ул бала менән: өҫ-башын ҡарайһың, ашатаһың, унан көндөҙгөлөккә кемгә ҡалдырып тороу тураһында баш ҡайнатаһың.* Б. Бикбай.

**КӨНДӨҘӨН** *р.* Көндөҙгө ваҡытта, яҡтыла. *Кәзә көндөҙөн ишек алдында урала, кисен фермаға китә.* С. Кулибай.

**КӨНДӘГЕ** *с.* Көн һайын була торған. *Көндәге эш. Көндәге хәл. Көндәгенән иртә тороу.*

● *Көндәгене көндә уйла.* Әйтем.

**КӨНДӘЛЕК** [1] *с.* Һәр көн була торған, көндәге. *Көндәлек мәшәҡәт. Көндәлек эш. Көндәлек норма.* ■ *[Быйылғы] көндәлек һауым былтырғынан байтаҡ юғары, дәүләткә продукция ла күберәк оҙатыла.* «Совет Башҡортостаны», 1986, 27 май. / Һәр ваҡыттағы, ғәҙәттәге. *Көндәлек тормош.*

**КӨНДӘЛЕК** [2] *и.* **1.** Кешенең үҙ тормошон көндән-көнгә тасуирлап барған шәхси яҙмаһы һәм шуны яҙған дәфтәр. *Көндәлек яҙыу.* ■ *Бөгөн көндәлеккә мин яҙырға булдым бөтәһен, уңышлы һүҙ, тормош темаһын.* М. Хәй. *Көндәлек төрлө сәбәптәр арҡаһында яҙыла. Берәүҙәре .. күргәнен онотмаҫ өсөн, икенселәре күңел йыуатыу өсөн яҙа.* «Ағиҙел», 1967, № 1. / Эш барышын көндән-көнгә теркәп барған яҙма һәм шуны яҙған дәфтәр. *Класс етәксеһенең көндәлеге. Мелиоратор көндәлеге. Сәйәхәтсе көндәлеге.* ■ *Агитаторҙар көндәлек алып бара. Уға ҡайһы көндө ниндәй темаға әңгәмә үткәрелгәнлеге яҙыла.* «Совет Башҡортостаны», 1966, 20 ғинуар.

**2.** Бирелгән дәрес һәм уҡыусы алған баһаны яҙа торған махсус дәфтәр. *[Гөлшаттың] көндәлегендә биш билдәләре генә.* Ф. Рәхимғолова.

**КӨНДӘН-КӨН** *р.* Көн үткән һайын. *Тай көндән-көн яҡшылана, тамам матурланып, ат булып китә* (Әкиәттән).

**КӨНДӘШ** *и.* **1.** Күп ҡатынлы ирҙең бер ҡатыны (икенселәренә ҡарата). *Көндәш алдыртыу. Көндәш өҫтөнә килеү.* ■ *Күҙең төштө бер йәшкә, алдың уны көндәшкә. Көндәш утында яндырҙың, ҡараманың күҙ йәшкә* (Бәйеттән).

**2.** Мөхәббәте кем менәндер уртаҡ ҡатын-ҡыҙ; көнәркәш.

**КӨНДӘШЛЕ** *с.* Көндәше (1 мәғ.) булған, көндәш менән йәшәгән. *Көндәшле ҡатын. Көндәшле булыу.*

● *Көндәшленең төнө генә түгел, көнө лә уртаҡ.* Әйтем.

**КӨНЙЫЛЫТҠЫС** *и. диал.* **1.** Сеңгәсәй.

**2.** *ҡар.* **ҡамҡа** [2].

**КӨНЙӘЛӘ** *и.* **1.** Иләргә тетелгән йөн, мамыҡ йәки сүбәк йомарламы. *Ике көнйәлә йөн.* ■ *[Ҡарсыҡ] хатты кире урынына ҡуйҙы ла, .. ҡабаһынан көнйәләһен һауырға тотондо.* Ғ. Хәйри. **Көнйәлә төбө** 1) көнйәләне иләгәндән ҡалған ҡыҫҡа йөн; 2) *шул уҡ* **ҡаба төбө** (*ҡар.* **ҡаба** [1]).

**2.** (*йәки* **көнйәлә таяғы**) *диал. ҡар.* **ҡолға** 2.

♦ **Көнйәлә баш** ялбыр баш (ҡатын-ҡыҙға шаяртыу ҡатыш шелтәләгәндә әйтелә). *[Гөлзифа — Асияға:] Ай көнйәлә баш, көнйәлә баш! Нимә һөйләп торғанын ҡара!* Б. Бикбай.

**КӨНКҮРЕШ** *и.* **1.** Донъя көтөү, көн итеүгә бәйле тормош; көндәлек тормош. *Көнкүреш әйберҙәре. Халыҡты көнкүреш яғынан хеҙмәтләндереү.* ■ *Башҡорт АССР-ында .. көнкүреш хеҙмәте күрһәтеү һәм коммуналь хужалыҡ учреждениелары селтәрен киңәйтеү .. тормошҡа ашырыла.* «Башҡорт АССР-ының Конституцияһы», 1984. **Көнкүреш йорто** донъя көтөү, көндәлек тормошҡа бәйле эштәрҙе башҡарыусы учреждение.

**2.** Йәшәү шарттары, тормош хәле. *Көнкүреште яҡшыртыу.* ■ *Тау халҡының көнкүреше, ғөрөф-ғәҙәттәре лә үҙенсәрәк.* Ғ. Хөсәйенов. *Бабай менән әбейҙең көнкүрештәре лә етеш кенә булған, ти* (Әкиәттән).

**КӨНЛӨК** [1] *и.* Төп һан менән килеп, билдәле бер ваҡыт араһын белдерә. *Айҙың өсөнсө биш көнлөгө. Декабрь айының тәүге ун көнлөгө.* / Билдәле бер ваҡытҡа тәғәйенләнгән эште белдерә.

**КӨНЛӨК** [2] *и.* Көн иҫәбенән түләнә торған ваҡытлы эш. *Көнлөктә йөрөү. Көнлөккә сығыу. Көнлөккә эшләү. Көнлөккә ураҡ урыу.*

**КӨНЛӨКЛӨ** *с.* Көн иҫәбенән түләнә торған. *Көнлөклө эш.*

**КӨНЛӨКЛӘҮ** *ҡ.* Көнлөккә [2] ялланыу. *Әсәйем дә ҡыш буйына кешегә йөн, сүс иләп, йәйен көнлөкләп эшләп, иш янына ҡуш яһай торғайны.* Т. Йәнәби.

**КӨНЛӨКСӨ** *и.* Көнлөккә [2] ялланып эшләгән кеше. *Эш ҡайнай. Егеттәрҙең күбеһе көнлөксө икәнлектәрен бөтөнләй онотҡан: бейек эҫкерт баштарына көлтәләрҙе ян-фарман тондора.* А. Таһиров.

● *Көндәшлегә төн оҙон, көнлөксөгә көн оҙон.* Мәҡәл.

**КӨНЛӘП** *р.* **1.** Көн иҫәбенән, көн һайын. *Сөйәлбай айлап түгел, көнләп үҫкән* (Әкиәттән).

**2.** Төп һан менән килеп, көн, ваҡыт самаһын белдерә. *Егерме көнләп ауылда яттым.*

**КӨНЛӘТӘ** *р. кар.* **көнөнә.** *Көнләтә әйләнеп ҡайтыу.* ■ *Берәүҙәре бесәнгә көнләтә йөрөнө. Икенселәре, бер юлы китеп, аҙналар буйы ғаиләһе эргәһенә ҡайтманы.* Я. Хамматов.

**КӨНЛӘҮ** [1] *ҡ.* Ҡайҙалыр көн үткәреү. *Көнләп ҡалыу.* ■ *[Ҡуҙыйкүрпәс] дөйә көтөүсеһе янында көнләне, ял итте.* «Ҡуҙыйкүрпәс менән Маянһылыу».

**КӨНЛӘҮ** [2] *ҡ. диал.* Көнләшеү.

**КӨНЛӘШЕҮ** *ҡ.* **1.** Яратҡан кешеңде икенсе берәүҙән ҡыҙғаныу. *Ниңә шулай әрнеп көнләшәһең? Көнләү — бик ҡырағай йола бит! Яратыу ҙа ҡырағай йоламы ни? Улар һәр саҡ бергә була бит.* Ҡ. Даян. *Ә мин, ирем булһа, көнләшер инем,— тине Гәүһәр...— Кешеләр түгел, ҡоштар ҙа көнләшә белә.* И. Абдуллин.

**2.** Берәй кешелә ниндәй ҙә булһа өҫтөнлөк күреп эстән үртәнеү. *Беҙҙең бәхеттән бөтә батальон һалдаттары көнләшә.* Д. Юлтый. *Егеттең айғырына һоҡланмаған кеше ҡалмаған, ти, бик яман көнләшә лә башланылар, ти* (Әкиәттән). / Кешенән ҡалышмаҫҡа, уҙҙырырға тырышыу, сәмләнеү. *Көнләшеп эшләү. Көнләшеп донъя көтөү.*

**3.** Кеше йәки нимәнеңдер айырым бер сифатына, үҙенсәлегенә һоҡланыу, ҡыҙығыу. *[Мораҙым:] Лётчиктарға көнләшеп ҡарай торғайным.. Улар менән бергә булғым, бергә күктә һүгышҡым килә торғайны.* Ғ. Әмири. *Платов .. талғын ғына елдән дә көнләшеп ҡуйҙы. Их бына әле ошо дала еле һымаҡ, үҙ иркеңдә булһаң ине!* Д. Исламов. *Сәлимәкәй төндә йоҡлағанда, ай көнләшә ҡыйғас ҡашынан* (Халыҡ йырынан).

● *Күрше күршенән күреп көнләшә.* Әйтем.

**КӨНЛӘШТЕРЕҮ** *ҡ.* Көнсөлөк уятыу, көнләшеү хисе уятыу.

**КӨНОҘОН** *р. диал.* Көнө буйы. *Сыйырсыҡтар ҡанат елпеп, көноҙон һайрап тора.* Ш. Бикҡол.

**КӨНӨ** *р.* Билдәле бер көндә. *Йәй көнө. Ҡыш көнө. Ул көнө.* ■ *Бер ял көнө кешеләр йыйнаулашып сыҡтылар ҙа әҙер бураны күтәреп тә ҡуйҙылар.* М. Тажи.

**КӨНӨНДӘ** *р.* Шул уҡ көн эсендә. *Был хәбәр бөтә тирә-як ауылдарға көнөндә таралып өлгөрҙө.* Ғ. Әмири.

**КӨНӨН-ТӨНӨН, көнөн дә төнөн дә** *р.* Тәүлек әйләнәһенә; көнө-төнө. *Беҙ ҡола ҡашҡаны көнөн дә төнөн дә ҡарауыллап ҡына йөрөй башланыҡ.* С. Кулибай. *Беҙҙең өйҙә көнөн-төнөн тыныс, әллә шуға уның ҡото юҡ.* Н. Нәжми.

**КӨНӨНӘ** *р.* Шул уҡ көн эсендә. *Көнөнә ураным.*

**КӨНӨ-ТӨНӨ** *р.* Тәүлек әйләнәһенә; һис туҡтауһыҙ, һәр ваҡыт; көнөн-төнөн. *Көнө-төнө эшләү. Көнө-төнө юлда йөрөү.*

**КӨНСӨ** *с. кар.* **көнсөл.**

**КӨНСӨЛ** *с.* **1.** Яратҡан кешеһен икенсе берәүҙән урынлы-урынһыҙ ҡыҙғаныусан. *Көнсөл булыу.* ■ *Хәбирә баштан уҡ үҙенең утә көнсөл булыуын күрһәтте.. Искужа йыйылыштан һуңға ҡалып ҡайтҡан көндәрҙә, мендәрен күҙ йәше менән йыуып, илай торғайны.* Б. Дим. *Ғәли бик көнсөл ир булып сыҡҡан тинеләр. Гөлсөмдө шул тиклем ҡурсалай икән, хатта йырынан да тыйып ҡуйған.* З. Ураҡсин.

**2.** Башҡаларҙа ниндәй ҙә булһа өҫтөнлөк күреп, эстән үртәнә торған; тар тәбиғәтле. *Батша, донъяла минән дә бай кеше булмаҫҡа тейеш, тип йәшәгән ҡара эсле, көнсөл бер нәмә булған* (Әкиәттән). / Шул тойғоно сағылдырған. *Көнсөл ҡараш.* ■ *Ғәзимәнең көнсөл йәшел күҙҙәре Фәриҙәнең дәфтәренә ҡарайҙар, бигерәк оҫта яҙа бит Фәриҙә.* Ф. Рәхимғолова.

**КӨНСӨЛЛӨК** *и. кар.* **көнсөлөк.** *Мөмкин булһа көнсөллөк менән үҫеп, күптән дөйә булыр ине бик күп көсөк.* С. Ҡудаш.

**КӨНСӨЛӨК** *и.* **1.** Яратҡан кешене икенсе берәүҙән ҡыҙғаныу тойғоһо. *Епшек ҡарҙы йомарлап алды ла, Йәмилә Афзалға ырғытты. Был шаярыу Гүзәл йөрәгендә көнсөлөк хистәре уятты.* С. Ҡудаш.

**2.** Башҡаларҙа ниндәй ҙә булһа өҫтөнлөк күреп үртәнеү тойғоһо. *Көнсөлөк килеү.* ■ *Бабай менән әбей кинйә улдарынан кинәнеп бөтә алмаған. Сәлмәндең былай булыуы Кәмән менән Сәмәнгә бер ҙә оҡшамаған. Уларҙың көнсөлөгө килгән* (Әкиәттән).

● *Көнсөлөк ғишыҡтың тоҙо.* Әйтем.

**КӨНСӨЛӘҮ** *ҡ. диал. кар.* **көнләшеү** 2.

**КӨНСЫҒЫШ** *и.* **1.** Көнбайышҡа ҡапма-ҡаршы ятҡан ҡояш сыҡҡан тараф (донъя тарафтарының береһе). *Көнсығыштан иҫкән ел.* // *Көнсығыш сик.* ■ *Ҡояш байышындағы ҡыҙыллыҡ һүнеп бөтмәгән, көнсығыштан алланып таң ҡалҡа башлаған.* Һ. Дәүләтшина. *Ҡояш байығанда көнсығыш ҡыҙарһа, иртәгеһен ямғыр яуа.* Һынамыш.

**2.** (*баш хәреф менән*) Ҡояш сыҡҡан тарафтағы ер һәм илдәр (Көнбайыш Европа һәм Америкаға ҡаршы ҡуйыу рәүешендә ҡулланыла). *Алыҫ Көнсығыш. Яҡын Көнсығыш. // Көнсығыш Европа. Көнсығыш илдәр.*

**КӨН-ТӨН** *р.* Бер туҡтауһыҙ, һәр ваҡыт; көнөн дә төнөн дә; көнө-төнө. *Көн-төн эшләү.* ■ *[Байрамбикә:] Йәрмөхәмәт ағай көн-төн уҡый бит ул.* М. Хәйҙәров. *[Ел ул] дилбегәһеҙ, ныҡтаһыҙ, эшләй көн-төн туҡтауһыҙ.* Ғ. Амантай.

**КӨНТЫУЫШ** *и. ҡар.* **көнсығыш.**

**КӨН-ФӘЙӘКҮН** [*гәр.*] *киҫ. иҫк.* Бул тине — булды (ниҙелер дөрөҫләгәндә әйтелә). *[Аҡһаҡал:] Йомартлыҡтан мөлкәт кәмемәй ул. Көн-фәйәкүн!* М. Кәрим.

**КӨНШӘГӘЙ** *с. диал.* Ябай, эскерһеҙ.

**КӨНЬЯҠ** *и.* **1.** Төньяҡҡа ҡаршы тараф (донъя тарафтарының береһе). *Тауҙың көньяҡ бите. Көньяҡҡа ҡараған тәҙрә. // Көньяҡ котоп. Көньяҡ ярымшар.* ■ *Аҡрын иҫкән көньяҡ еле .. йәйелеп ятҡан йәшеллек диңгеҙен яй ғына тулҡынландыра.* Ғ. Дәүләтшин.

**2.** Шул яҡтағы ил һәм ерҙәр. *Дошман тамам юҡ ителеп бөтмәгән әле. Россияның көньяғында аҡгвардеецтарҙың бандалары эш итә.* «Совет Башҡортостаны», 1964, 30 апрель.

**3.** Климаты йылы яҡ. *Көньяҡта ял итеү. Көньяҡ халҡы.* ■ *Ярҙы япраҡ бар ағас, килде көньяҡ ҡоштары: аҡҡош, сыйырсыҡ, ҡарлуғас.* Ш. Бабич.

**КӨНЬЯҠ-КӨНБАЙЫШ** *и.* Көньяҡ менән көнбайыш араһындағы тараф.

**КӨНЬЯҠ-КӨНСЫҒЫШ** *и.* Көньяҡ менән көнсығыш араһындағы тараф.

**КӨНӘЛКӘ** *с. диал.* Көнсөл.

**КӨНӘРКЕ** *с. һөйл.* Бары менән риза булмаған; ҡәнәғәтһеҙ. *Көнәрке кеше. Көнәрке булыу.*

**КӨНӘРКЕҮ** *к. һөйл.* Бары менән риза булмай, ҡәнәғәтһеҙлек күрһәтеү. *Көнәркеп, яҡшынан яҡшыны ғына һорай.*

**КӨНӘРКӘШ**[1] *с.* Эштә, тормошта кешенән уҙҙырырға тырышҡан; көнсөл; сәмле. *Көнәркәш кеше. Көнәркәш булыу. // Улар [малайҙар] кем уҙарҙан көнәркәш эшләй.* Ж. Кейекбаев. *Бер нисә егет [таҡмаҡтарҙы] көнәркәш теҙеп әйтәләр һәм шунда уҡ уҙ ижадтарын ҡушып, ҡарттырып ебәрәләр.* К. Мәргән.

**КӨНӘРКӘШ**[2] *и.* Мөхәббәтә кем менәндер уртаҡ ҡатын-ҡыҙ. *[Альберт:] Ниңә, Тәнзилә һинең көнәркәшеңме ни? Ул йондоҙ булһа, һин минең өсөн яҡты ай бит, Хәҙисә.* Ғ. Ибраһимов.

**КӨНӘРКӘШЕҮ** *к.* Ҡалышмаҫҡа, уҙҙырырға тырышыу; сәмләнеү. *Көнәркәшәп донъя көтөү. Көнәркәшеп эшләү.*

**КӨНӘС** *и. диал.* Ҡояш төшкән ер. *Көнәстә үҫкән еләк. // Көнәс урын. Көнәс ер.*

**КӨҢ** *и. иҫк.* Ҡол ҡатын йәки ҡыҙ. *Көнһылыуҙың кеше үткәрмәй торған ҡырҡ ҡарауылы, ҡырҡ бурҙай эте, ҡырҡ көңө бар, ти* (Әкиәттән).

● *Ҡатын тота белмәгән көң итер, ебәк тота белмәгән йөн итер.* Мәҡәл.

**КӨҢГӨР** *с.* Бик асыҡ булмаған, тоноҡ (тауышҡа ҡарата). *Ҡоростарҙың көңгөр тауышы күтәрелде цехтар түбәнән.* М. Тажи.

**КӨҢГӨР-КӨҢГӨР** *окш.* Әкрен генә булып, өҙөлөп-өҙөлөп ағылған тауышты белдергән һүҙ. **Көңгөр-көңгөр һөйләшеү** тыныс ҡына, яйлап ҡына һөйләшеү.

**КӨҢГӨР-ҠАҢҒЫР** *р.* Тыныс ҡына, бей көй менән, әкренләп. *Көңгөр-ҡаңғыр эшләп йөрөү.* ■ *[Әбей менән бабай] татыу ғына, көңгөр-ҡаңғыр донъя көткән.* Б. Вәлит. *Мәғфүрә әбей өйҙә яңғыҙы ғына көңгөр-ҡаңғыр килеп йөрөй.* Н. Мусин.

**КӨҢГӨРЛӘШЕҮ** *к.* Һәүетемсә генә үҙ-ара әңгәмәләшеү, һөйләшеү. *Ҡарттар көңгөрләшеп һөҙөмтәгә киләләр.* С. Кулибай.

**КӨҢГӨРТ** *с.* Салт асыҡ булмаған, ҡараһыу, тоноҡ (төҫкә ҡарата). *Көңгөрт он. Көңгөрт ситса. Көңгөрт ҡыҙыл. Көңгөрт һары. / күсм.* Төҫһөҙ (йөҙ, сырайға ҡарата). *Көңгөрт сырай. Көңгөрт булыу.*

**КӨҢГӨРТЛӘНЕҮ** *к.* Көңгөрт төҫкә инеү, көңгөрт булыу. *Ҡара болот сыҡты. Көңгөртләнде бөтә ер өҫтө.* К. Кинйәбулатова.

**КӨҢГӨРТЛӘҮ** *к.* Көңгөрт төҫкә индереү, көңгөрт итеү.

**КӨҢГӨРТҺЫУ** *с.* Әҙ генә көңгөртөрәк, бөләңгерт (төҫкә ҡарата). *Ер өҫтөнә тулған ай ҡарап тора. Көйәнтәле әкиәт ҡыҙы көңгөртһыу нурын ҡоя.* С. Кулибай.

**КӨҢРӘНЕҮ** *к.* Ризаһыҙлыҡ менән һөйләнеү; мығырлау.

● *Көлә инеп, көңрәнә сыҡҡандан һаҡлан.* Мәҡәл.

**КӨҢРӘТЕҮ** *к.* Моңло итеү, яңғыратыу. *Көңрәтеп ҡурай уйнау. Көңрәтеп йырлау.*

**КӨҢРӘҮ** *к.* Моңло булып, күкрәктән сығып яңғырау. *Көңрәп сыҡҡан ҡурай тауышына кеше тып-тын ҡалған.* Б. Вәлит.

**КӨП**[1] *и.* **1.** Уратып тотош ҡаплаған тыш. *Ҡорттоң көбө.*

**2.** *анат.* Эске ағзаны ҡаплап торған яры. *Бауыр көбө. Бөйөр көбө. Йөрәк көбө.*

**3.** Өҫтән ҡаплаған ябыу. *Брезент көп. Таҡта көп.*

◆ **Аҡ көп** нурһыҙ аҡ сырайлы кешегә ҡарата әйтелә.

**КӨП**[2] *окш.* Ҡалын, йомшаҡ нәмәгә һуҡҡанда сыҡҡан тауышты белдергән һүҙ.

**КӨП**[3] *киҫ.* **Көғ** ижеге менән башланған төп сифат һәм рәүешкә ҡушылып, артыҡлыҡ дәрәжәһен бирә. *Көп-көрән.*

**КӨП-КӨП, көп тә көп** *окш.* Ҡабат-ҡабат көп иткән тауышты белдергән һүҙ.

**КӨПКӘ** *и.* **1.** Өйҙә торған йәш малды ябыу өсөн эшләнгән урын. *Бәрәстәрҙе көпкәгә индереү.*

**2.** Кәрәк-яраҡ ҡуйыу өсөн соланда яһалған бүлмә; кәзәнкә.

**КӨПЛӨ** *с.* Көп[1] (1, 3 мәғ.) менән ҡапланған. *Көплө бойҙай. Көплө йөк машинаһы.*

◆ **Көплө ҡорт** *ҡар.* **ҡорт**[1].

**КӨПЛӘМӘ** *и. ҡар.* **көп**[1] 3.

**КӨПЛӘНЕҮ** *к. төш. ҡар.* **көпләү.** *Ҡәҙретдинов ҡара күн менән көпләнгән диванға гөрһөлдәп килеп ултырҙы.* Ф. Иҫәнғолов.

**КӨПЛӘТЕҮ** *к. йөкм. кар.* **көпләү.**

**КӨПЛӘҮ** *к.* **1.** Тышҡы яҡтан көп менән ҡаплау. *Ишекте көпләү. Көпләп йылытыу.*

**2.** Ҡыуышлап өҫтән ябыу. *Машинаның кузовын көпләү.* ■ *[Ямал:] Председателгә әйтергә кәрәк әле: дүрт бағана ҡағып, башын брезент менән көпләһен дә, уртаға .. өҫтәл ҡуйҙырһын.* М. Тажи.

**КӨПЛӘШЕҮ** *к. урт. ярҙамл. ҡар.* **көпләү.**

**КӨПӨ** *и.* Һырыған, яғаһыҙ өҫ кейеме. *Көпө һырыу.* ■ *Самат тигәне — түңәрәк йөҙлө, киң ҡара ҡашлы, тубығына төшә яҙып торған көпө кейгән.* Ғ. Шәрипов. **Көпө салбар** *диал.* һырыған салбар.

**КӨПСӘК** *и.* **1.** Тәгәрмәстең күсәргә кейҙерелә торған үҙәк өлөшө. *Тәгәрмәс көпсәге.* ■ *Көпсәгенә тиклем бысраҡҡа батҡан тәгәрмәс аҡрын ғына әйләнә.* С. Агиш. *Хуш еҫе аңҡып торған дегет менән арба көпсәктәрен майланыҡ.* Й. Солтанов. **Дүрт көпсәк арба** *диал.* дүрт тәгәрмәсле арба. *Дүрт көпсәк арбаға тейәлеп Сосновканан Евстафийҙың ғаиләһе килеп төштө.* Ж. Кейекбаев.

**2.** *диал. ҡар.* **сығыр** 1.

**КӨПТӘЙ** *р.* **1.** Йыуан булып, ҡабарып (тәндең шешеүенә ҡарата). *Көптәй булып шешеү.* ■ *Ҡуңысын телеп, итегемде систергәс, врач, көптәй шешеп киткән аяғымды ҡарап: — Һынған..— тине.* Н. Мусин.

**2.** Ҡат-ҡат итеп, ҡалын (кейенеүгә ҡарата). *Көптәй кейенеп алыу. Көптәй булып кейенеп ултырыу.*

♦ **Эсе көптәй, аяғы ептәй** ҙур эсле кешегә (күберәк ауырыу балаға) әйтелә.

**КӨПТӘЙЕҮ** *к.* **1.** Ҙур булып ҡабарыу. *Һыйыр эсе көптәйгәнсә һыу эскән.* ■ *Саша көптәйгән портфель тотҡан, икенсе ҡулында кескәй генә сумаҙан.* К. Кинйәбулатова.

**2.** Йыуан булыу (кейгән кейемдән). *Көптәйеп кейенеп алыу.* ■ *[Алмаҡай менән Хәҙисә:] Ә, Айбикә еңгә, килдеңме? Ҡана, сисен, ни көптәйеп, кәзәкей кейеп ултыраһың үҙең.* Һ. Дәүләтшина.

**КӨПТӘЙТЕҮ** *к.* **1.** Ҙур итеп ҡабартыу, таһырайтыу. *Эсте көптәйтеү.*

**2.** Ҡат-ҡат кейем кейҙереп йыуанайтыу. *Көптәйтеп кейендереү.*

**КӨПТӘҮ** *и. диал.* Урындыҡ ҡаҙнаһы.

**КӨПШӘ** *и.* **1.** Сатыр сәскәлеләр ғаиләһенә ингән ҡыуыш һабаҡлы бер төркөм үләндәрҙең дөйөм исеме. **Ағыулы көпшә** шыма ҡабыҡлы, тамыры-ныҡ ағыулы көпшә (дымлы ерҙәрҙә, канау буйҙарында үҫә). **Айыу көпшәһе** шыма ҡабыҡлы, ағыулы, йыуан һаҫыҡ көпшә (һыу буйҙарында үҫә). **Болан көпшәһе** *диал. ҡар.* **шыма көпшә. Келән көпшә** *диал. ҡар.* **шыма көпшә. Ҡуян көпшәһе** *диал.* ҡуянтубыҡ. **Монар көпшәһе** *ҡар.* **шыма көпшә. Урман көпшәһе** *диал. ҡар.* **шыма көпшә. Һаҫыҡ көпшә** *ҡар.* **айыу көпшәһе. Шыма көпшә** шыма ҡабыҡлы, ашауға яраҡлы сәскәһе баллы көпшә (күберәк урман туғайҙарында, дымлы ерҙәрҙә үҫә). **Ылан көпшәһе** шыма ҡабыҡлы, тамыры ашауға яраҡлы, артыҡ бейек булмаған көпшә (күберәк дымлы урындарҙа, һыу баҫа торған туғайҙарҙа үҫә). / Шул үләндәрҙең ҡыуыш эсле һабағы. *Ҡуянтубыҡ көпшәһе. Йыуан көпшә.*

**2.** Балтырғандың ашай торған һабағы. *[Хәсби:] Миңлебикәләр менән Бөркөт сағылы буйына көпшә, ҡаҡы йыйырға барайым әле.* Т. Йәнәби.

**3.** Ҡыуыш эсле таяҡ һымаҡ нәмә. *Быяла көпшә. Резина көпшә.*

**4.** Эсе ҡыуыш күҙәнәк. *Капилляр көпшәләр. Нервы көпшәһе.*

**КӨПШӘК** *с.* **1.** Баҫылып ҡатмаған; тығыҙ түгел, йомшаҡ. *Көпшәк ҡар.* ■ *Һиңә түшәк булыр көпшәк тупраҡ, йәшел юрған булыр был сирәм.* М. Кәрим. *Яҙғы һыуҙар ашаған көпшәк ҡар Салихты күтәрә алмай.* Х. Мохтар.

**2.** *күсм.* Тығыҙ түгел, бушаҡ (тәнгә ҡарата). *Көпшәк тәнле.* ■ *Малайҙың көпшәк итле аҡ беләктәрендә .. мускул тигәндең әҫәре лә юҡ.* Ф. Иҫәнғолов.

**КӨПШӘКЛӘНЕҮ** *к.* Көпшәккә әйләнеү, йомшарыу.

**КӨПШӘЛӘНЕҮ** *к.* Көпшә (1, 2 мәғ.) сығарыу, көпшәле булыу. *Балтырған көпшәләнә башлаған.*

**КӨПШӘҮ** *к. диал. ҡар.* **көпләү** 1. *Өйҙө көпшәү.*

**КӨПӘ-КӨНДӨҘ** *р.* Яп-яҡтыла, көндөҙөн. *Мәмбәтколов эскадронының .. көпә-көндөҙ хуторға килеп инеүе гитлерсылар өсөн көтөлмәгән хәл булды.* Ә. Ихсан. *Көпә-көндөҙ, ҡайным, йөҙ ояла, һөйләшербеҙ әле, төн оҙон* (Халыҡ йырынан).

**КӨПӘЛӘЙ** *и. диал.* Көпө.

**КӨПӘС** *с. диал.* Ҡупшы.

**КӨПӘШ** *и. диал.* Гөбөргәйел.

♦ **Көпәш тараҡан** ҡыр тараҡаны.

**КӨР** *с.* **1.** Ит-май ултырған; һимеҙ (хайуандарға ҡарата). *Көр мал.* ■ *Сабышҡы ерән .. көр, йөндәрен йылҡылдатып, уйнап ҡына бара.* Б. Бикбай. / *диал.* Таҙа, ябыҡ түгел (кешегә ҡарата).

**2.** Тулы көскә эйә; ныҡлы, баҙыҡ. *Улар [тирәктәр] бик көр булып үҫеп килә.* Ә. Вәли. / *күсм.* Күтәренке, баҙыҡ. *Көр күңелле.* ■ *Бер ҡыҙ көр, батыр тауыш менән йырлап ебәрҙе.* Б. Ишемғол. *[Батша — итексегә:] Һинең күңел бөгөн дә бик көр күренә, әллә бер-бер шатлығың бармы* (Әкиәттән).

**КӨРГӨ** *и. диал.* Көжгә.

**КӨРГӨЛӘҮ** *к.* Көргө менән һуйыу (һалабашты, ҡабыҡты).

**КӨРГӨС** *и. диал.* Тәртешкә, болғауыс.

**КӨРГӨҮ** *к.* Таяҡ тығып төрткөләү, болғатыу; көжгөү. *Самауырҙы көргөү.*

**КӨРГӨҮЕС** *и.* Көргөй торған таяҡ.

**КӨРК-КӨРК** *оҡш.* Әтәс-тауыҡтың ем табып саҡырған тауышын белдергән һүҙ. *Ана бер ҡыҙыл әтәс әллә нимә тапҡан да, көрк-көрк тип тауыҡтарын саҡыра.* Ғ. Дәүләтшин.

**КӨРКӨЛДӘҮ** *к. диал.* Көртләү.

**КӨРКӨРӘҮ** *к. диал.* Гөр-гөр килеп шаулау, гөрләү. *Ҡунаҡтар ҡыҙмаса булып алды, ашхана эсе тауыш алмаштыра алмаҫлыҡ һөйләшеү, көркөрәп көлөшөүҙәр менән тулды.* Ж. Кейекбаев.

**КӨРКӘ** *и. иҫк.* Ергә ҡаҙып яһаған торлаҡ; баҙ өй.

**КӨРКӘҺЕҘ** *с. иҫк.* Торор ере булмаған, йортһеҙ. *Көркәһеҙ кеше.*

**КӨРЛӨК** *и.* **1.** Көр булыу сифаты; һимеҙлек. *Урта көрлөктәге мал.*

**2.** Тормоштағы муллыҡ, етеш хәл. *Бөтә баҫыу ҡояш аҫтында .. йылтырап ята. Унан көрлөк һәм туҡлыҡ аңҡып тора.* Ә. Вәли.

**3.** Яҡшы кәйеф. *Күңел көрлөгө.*

● *Көрлөккә сыҙамаһаң, хурлыҡҡа сыҙарһың.* Мәҡәл.

**КӨРМӘ: көрмә тел** тотлоғоп һөйләгән. *Көрмә тел кеше.*

**КӨРМӘКЛӘНЕҮ** *ҡ. ҡар.* **көрмәлеү.**

**КӨРМӘКЛӘҮ** *ҡ.* **1.** Көрәшкәндә билдән уратып тотоу. *Көрмәкләп алыу.*

**2.** *ҡар.* **көрмәү** [1]. *Көрмәкләп бәйләү.*

**КӨРМӘКЛӘШЕҮ** *ҡ.* Ҡулға-ҡул килеп, ҡосаҡлашып кем еңерҙән алышыу; айҡашыу. *Көрмәкләшеп уйнау.* ■ *Ҡарт асыуланып, Айыуголаҡҡа килеп йәбешкән. Былар көрмәкләшеп алып киткәндәр* (Әкиәттән).

**КӨРМӘЛДЕРЕҮ** *ҡ.* Тотҡарлау, тотлоҡтороу (телде). *Тел көрмәлдерерлек ҡыйын һүҙ.*

**КӨРМӘЛЕҮ** *ҡ.* **1.** *төш. ҡар.* **көрмәү** [1]. *Нык көрмәлгән бау.*

**2.** Хәрәкәтте тотҡарлап, уралыу. *Ҡымшаныу, иркен һулау юҡ, тар кәберҙәй төрмәлә. Аҫҡа кипкән ҡул-аяҡҡа тимер бау көрмәлә.* Т. Йәнәби.

**3.** Бау, епкә уралып хәрәкәтһеҙ ҡалыу. *[Абыстай:] Быҙауҙарға ла күҙ-колаҡ булырһың. Әллә ни, муйынсаҡтарына көрмәлеп ҡуймаһындар.* С. Агиш.

♦ **Тел көрмәлеү** әйтер һүҙҙе тейешенсә әйтә алмай тотлоғоу. *Беренсе рюмканан уҡ телдәр көрмәлә башланы.* Н. Иҙелбай. *Билал ниҙер әйтмәксе булғайны ла, ауыҙынан тауышы ла сыҡманы, теле көрмәлде.* Ә. Вәли.

**КӨРМӘЛӘНЕҮ** *ҡ. ҡар.* **көрмәлеү** 2.

**КӨРМӘЛӘҮ** *ҡ. ҡар.* **көрмәү** [1].

**КӨРМӘҮ** [1] *ҡ.* Салып алып, элмәк итеп бәйләү. *Көрмәп бәйләү.* ■ *Айбулат дилбегәһен әллә нисә көрмәп, әллә нисә систе.* Һ. Дәүләтшина.

● *Ҡыҫҡа еп көрмәүгә килмәҫ.* Әйтем.

**КӨРМӘҮ** [2] *и.* Телдең тотлоғоуы. *Теленә көрмәү ингән.*

**КӨРӨ** *и. ҡар.* **көрөҫ. Арт көрө** сүпләп һуҡҡанда биҙәк төшөрөүҙе еңеләйтеү өсөн ҡулланылған аҫмалы сыбыҡ.

**КӨРӨГӨҮ** [көрөкғ] *ҡ.* Ит ултырып, көргә әйләнеү; көрәйеү. *Йәш үләндә мал тиҙ көрөктө.*

**КӨРӨК** [1] [*рус.* крюк] *и. диал.* Суртанлыҡ.

**КӨРӨК** [2] *с. диал. ҡар.* **көр** 1.

**КӨРӨКТӨРӨҮ** *ҡ. ҡар.* **көрәйтеү** [1].

**КӨРӨН** *и. ҡар.* **гөрөн** 1. *Тротуарҙар буйлап көрөндәр ташып аҡты.* С. Агиш.

**КӨРӨҪ** *и. туҡ.* Арҡау һалыу өсөн буйлыҡты икегә айырып, алмаш-тилмәш асып тора торған ҡуш ҡорамал. *Көрөҫ таяғы. Киндер көрөҫө. Септә көрөҫө. Ҡылдан ишелгән көрөҫ.* **Көрөҫ арбаһы** *диал. ҡар.* **көрөҫ сығыры. Көрөҫ аты** (*йәки* **тәгәрмәсе**) *ҡар.* **көрөҫ сығыры. Көрөҫ бауы** көрөҫтәрҙе сығырға аҫҡан бау. **Көрөҫ ебе** (*йәки* **күҙәүе**) көрөҫтөң буйлыҡты үткәреү өсөн элмәкләп ҡуйған ебе. **Көрөҫ сығыры** (*йәки* **тейәге**) көрөҫтө күтәреп алмаш-тилмәш йөрөтөп торған сығыр йәки тейәк.

**КӨРӨШКӘ** [*рус.* кружка] *и. һөйл.* Стакан рәүешендәге тотҡалы һауыт; кружка. *Ҡалай көрөшкә. Сынаяҡ көрөшкә.*

**КӨРПӨЛДӘК** *с.* Көрпөлдәп ятҡан, йомшаҡ; өрпәк. *Көрпөлдәк ҡар.* ■ *[Малайҙар] көрпөлдәк ҡарҙы борхолдатып .. йүгерешә.* Һ. Дәүләтшина.

**КӨРПӨЛДӘҮ** *ҡ.* Баҫҡан, тейгәнгә борҡоп китеү, өрпәк булыу (ҡалын ҡатлам булып ятҡан онтаҡ нәмәләргә ҡарата); өрпөлдәү. *Көрпөлдәп ятыу. Көрпөлдәп торған тупраҡ.* ■ *Көн ҡоролар ҙа убаның өҫтөндәге көрпөлдәп ятҡан яңы көл ел менән осоп ауыҙға, танауға күҙгә тулып тора.* Ғ. Дәүләтшин.

**КӨРПӘ** [1] [*рус.* крупа] *и.* **1.** Ашлыҡтың он итеп тартҡанда онталмай ҡалған ҡабығы. *Көрпәле он. Көрпәгә күп сығарыу.* ■ *[Әхмәт Бурылға] йомшаҡ үләндәрҙе көрпә менән бутап бирә торғайны.* С. Агиш.

**2.** *диал.* Ярмаланып торған ҡаты ҡором. *Мейес мөрйәһенә көрпә тулған.*

♦ **[Күҙгә] көрпә осороу** (*йәки* **һибеү**) *диал.* күҙ буяу (*ҡар.* **күҙ**).

**КӨРПӘ** [2] *с.* Ҡуңыр (һыйыр төҫөнә ҡарата). *Көрпә һыйыр.*

**КӨРПӘ** [3] *и. ҡар.* **күрпә** [1] 1.

**КӨРПӘК** *с.* Баҫылып ныҡымаған, көрпөлдәп ятҡан; йомшаҡ. *Он кеүек көрпәк.* ■ *Ел һис баҫылырға уйламай: һаман олой, һаман һыҙғыра, көрпәк ҡарҙы ойоҡһота.* «Ҡайнар йөрәкле кешеләр», 1967.

**КӨРПӘКЛӘНЕҮ** *ҡ.* Көрпәк булыу. *Көрпәкләнеп ятҡан тәүге ҡар.*

**КӨРПӘКӘЙ** *и.* Көрпә һыйыр.

**КӨРПӘСИТКӘ** [*рус.* крупчатка] *и.* Бойҙайҙың үҙәген генә һурҙырып тартҡан яҡшы он.

**КӨРПӘСӘ** *и. диал.* Түр юрғаны (*ҡар.* **юрған**).

**КӨРПӘСӘЙ** *и. диал. ҡар.* **ташбаш** 1.

**КӨРПӘҮ** *ҡ. диал.* Өҫтән ҡаплау, бөркәү. *Юрған көрпәү.*

**КӨРПӘҮЛЕ** *с.* Өҫтән ҡаплаулы. *Көрпәүле машина.*

**КӨРРӘ** [1] [*ғәр.*] *и. иҫк.* Йөк. *Хасидтарҙың йөрәктәре һалмаҡланды, көррәһе ауыр булды тарталмаҫтай.* Аҡмулла.

**КӨРРӘ** [2] [*ғәр.*] *и. иҫк. кит.* Тумалаҡ нәмә.

♦ **Көррәи арыз** Ер шары. **Көррәи мөжәссәмә** глобус.

**КӨРСИ** [*ғәр.*] *и. иҫк.* **1.** Ултырғыс. *Тора был ҡыҙ ҡарап, ҙур ҡара күҙҙәрен тултырып, аҫыл таштар менән биҙәкләнгән бер көрсигә ултырып.* М. Ғафури.

**2.** Мөнбәр, кафедра.

**3.** Тәхет. *Хакимлыҡ көрсиһе.* **Мөхәммәт көрсиһе** 1) Мөхәммәт пәйғәмбәр тәхете; 2) *күсм.* изге күргән урын. *Ул [урман] беҙҙең өсөн йәннәтелмәғуа, Мөхәммәт көрсиһе: күпме барһаҡ, шат, көләс, үҙгәрмәй бер көйө.* И. Насыри.

**Аятыл көрси** ҡөрьәндең тәхет тураһындағы аяты.

♦ **Ғәрше көрси** *кар.* **ғәрше.**

**КӨРСӨ** [*фарс.*] *и. иҫк.* Суҡмар (боронғо һуғыш ҡоралы).

**КӨРСӨЙ** *и. кар.* **көрси.**

**КӨРСӨК** *и. диал.* **1.** Ниҙеңдер килеп бөткән ере; сик. *Ҡалды ғүмер .. Ә ҡалғаны көрсөгөнә ҡыла сәфәр.* Н. Нәжми.

**2.** Ярыштың тамамлана торған ерендәге һыҙыҡ. *Көрсөккә алдан килеү.* ■ *Көрсөккә етер алдан ғына теге ҡыҙ тағы ҡыуып килеп етте.* К. Мәргән.

♦ **Көрсөккә терәлеү** ҡыйын хәлгә, тоткарлыҡҡа осрау; һуңғы сиккә етеү. *Эш тағы ла көрсөккә терәлде. Яғырға бер ағас утын юҡ ине.* Ғ. Ғүмәр.

**КӨРҪ** *и.* Ҡыҙ кейәүгә киткән саҡта ағалары биргән бүләк.

**КӨРТ** *и.* Ҡалын ҡар. *Көрт аҫтында ҡалыу. Көрт баҫыу. Көрт ярып барыу.* ■ *Ас бүреләй олой ине тышта буран, көрткә сумып йоҡлай ине беҙҙең урам.* Р. Назаров.

**КӨРТБАҪМА** [1] *и. диал.* Көртмәле.

**КӨРТБАҪМА** [2] *и. диал.* Лапы.

**КӨРТ-КӨРТ** *окш.* **1.** Баҫып ултырған йәки себеш сығарған тауыҡтың саҡырыу тауышын белдергән һүҙ. *[Себештәрҙең] артынан көрт-көрт тип әсәләре килә.* К. Мәргән.

**2.** Ҡыштҡы юлдан барған тояҡ тауышын белдергән һүҙ. *Көрт-көрт итеү.*

**КӨРТЛӨК** [1] *и.* Тауыҡ һымаҡтар ғаиләһенә ингән, күкшел буҙ төҫтәге күгәрсен ҙурлыҡ ҡош (ҡыр тауыҡтарының бер төрө). *Һәр ағастың башында ҡар, төбөндә көртлөк.* Ғ. Әмири.

**КӨРТЛӨК** [2] *и. диал. кар.* **ҡуй** [1].

**КӨРТЛӘҮ** *к.* Көрт-көрт (1 мәғ.) итеү, көрт-көрт тигән тауыш сығарыу.

**КӨРТМӘ** *и. диал.* Көртмәле.

**КӨРТМӘЛЕ** *и.,* **ҡара көртмәле 1.** Йылтыр ваҡ япраҡлы, алһыу сәскәле, ҡыҫҡа һабаҡлы ҡыуаҡ үҫемлек; ҡара еләк (ылыҫлы йәки ҡатнаш урмандарҙа, дымлы ерҙә була). *Көртмәле сәскәһе.*

**2.** Шул үҫемлектең мүйыл ҙурлығында күгелйем ҡара емеше. *Сәғиҙә тау битендә бөртенешеп, ҡарағусҡылланып бешкән көртмәлене йыйырға тотонодо.* М. Тажи.

♦ **Ҡыҙыл көртмәле** 1) ялтырап торған мәңге йәшел ваҡ япраҡлы, алһыу суҡ сәскәле, ергә түшәлеп үҫкән, ҡыуаҡ үҫемлек; мүк еләге (төньяҡ урмандарында дымлы ерҙә була). *Ҡыҙыл көртмәле япрағы;* 2) шул үҫемлектең ваҡ ҡына әсе ҡыҙыл еләге. *Аяҡ аҫтында мүк түшәлеп ята, ҡыҙыл көртмәле осрай.* Ф. Мәҡсүтов.

**КӨРТМӘЛЕК** *и. кар.* **көртмәле.**

**КӨРТӨЙ** *и.* Еңһеҙ, яғаһыҙ һырма.

**КӨРТӨКӘЙ** *и. кар.* **көртөй.**

**КӨРТӨЛДӘҮ** *к.* Көрт-көрт (2 мәғ.) тигән тауыш сығарыу. *Сана шыйылдауын, тояҡтар көртөлдәүен .. еңеп, һауаны мотор тауыштары шаулатты.* Һ. Дәүләтшина.

**КӨРҺӨНДӨРӨҮ** *к.* Көрһөнөргә мәжбүр итеү. *Күкрәккә һыймай ташып барған тулҡындар ауыр көрһөндөрә.* Һ. Дәүләтшина.

**КӨРҺӨНӨҮ** *к.* Күңелһеҙ кисерештән тәрән итеп бер һулау. *Ауыр көрһөнөү.* ■ *[Ҡатын] яңғыҙ ҡалаһын уйлап, тәрән көрһөнөп ҡуя.* Н. Ҡәрип. *Ул тәрән итеп көрһөндө лә.., оҙон көй йырлар алдынан була торғанса, оҙаҡ ҡына тамаҡ ҡырҙы.* Ә. Вахитов.

● *Эшләргә иренгән көлөр ерҙә көрһөнгән.* Әйтем.

**КӨРҺӨНӨШӨҮ** *к. урт. кар.* **көрһөнөү.**

**КӨРШӘК** [*рус.* горшок] *и.* **1.** Балсыҡтан яндырып эшләгән йомро һауыт. *Оҙон муйынлы көршәк. Тоткалы көршәк.* ■ *Мин иртүк торғас.., китек көршәк күтәреп, һөт эҙләргә китәм.* Ғ. Минһажев. / *с. мәғ.* Балсыҡтан яндырып эшләнгән. *Көршәк көрөшкә. Көршәк һауыт.*

**2.** Түбә ябыу өсөн балсыҡтан яндырып яһаған һырлы плита; черепица. *Өйҙәр арыш һаламы менән тигеҙ, бөхтә итеп ябылған. Көршәк менән япҡан түбәләр ҙә күренә.* Д. Юлтый.

♦ **Көршәк ватыу** йыйын, байрам ваҡытында ҡыҙыҡ өсөн үткәрелә торған ярыш (бағана башына көршәк эленә, күҙен бәйләгән кеше бер нисә аҙым ерҙән туралап барып шуны һуға).

● *Ҡатыҡ әскән ҡотолған, көршәк ялаған тотолған.* Мәҡәл.

**КӨРШӘКСЕ** *и.* Балсыҡтан һауыт-һаба яһаусы.

**КӨРӘГӘ** *и.* **1.** Ҡымыҙ, бал, буҙа кеүек эсемлекте табынға ултыртыу өсөн ағастан йәки тиренән яһаған күнәк ҙурлығындағы һауыт. *Көрәгә ябыуы. Семәрле көрәгә.* ■ *Һике өҫтөнә ҡап урталыҡҡа ҙур бер көрәгә менән бал ҡуйылған. Көрәгәне уратып кешеләр ултырған.* Ж. Кейекбаев. *Көрәгәһе йәмле, ҡымыҙы тәмле, нисәү икән һауған бейәһе* (Халыҡ йырынан). **Көрәгәгә бата** (*йәки* **бәрәкәт**)! табынға көрәгә килтергәндә, хуплап ҡысҡыра торған һүҙ.

**2.** *диал.* Тәпән.

**3.** *диал.* Бал мискәһе.

♦ **Көрәгә төбө** 1) эскеле табын, мәжлес. *Әсәйем .. көрәгә төбөндә генә түгел сәй яһап ултырған сағында ла йырлап ебәрә торған булған.* Я. Ҡолмой; 2) мәжлестең һуңы. *Көрәгә төбөнә өлгөрәйем тип киләм,— тине Әптелмән бабай.. — Тап башына өлгөрҙөң.* С. Кулибай.

**КӨРӘГӘСЕ** *и.* Табын башлығы. *Шул арала көрәгәселәр һаба-турһыҡтарына, аяҡсылар туҫтаҡтарға ҡымыҙ ҡойорға ла етеште.* Ғ. Хөсәйенов. *Ташбулат көрәгәсе булғанлыҡтан, тәмләп ҡарар өсөн тип, башта уҡ мул ғына төшөрөп алғайны.* С. Агиш.

**КӨРӘЙЕҮ** *к.* **1.** Ит-май ултырыу (малға ҡарата); һимереү. *Хәҙер бейәләр көрәйҙе, сәскә утлап ҡына йөрөйҙәр.* Ш. Янбаев. / *диал.* Ит ҡуныу, таҙарыу (кешегә ҡарата). *Көҙгө байлыҡта бер аҙ көрәйеп ҡалған халыҡ [яҙ] ҡабат асыға башланы.* Ф. Иҫәнғолов.

**2.** Хәл кереп шәбәйеү; ҡеүәтләнеү. *Хәҙер дошман көрәймәҫ, беҙгә яҡын килә алмаҫ.* Ф. Дәүләтшин. / Тулы сифатлыға әйләнеү, яҡшырыу, күтәрелеү. *Тауышы көрәйҙе.* ■ *Кешеләрҙе шатлыҡ солғап алды. Кәйеф күтәрелеп күңел көрәйеп китте.* Б. Хәсән.

**КӨРӘЙТЕҮ** *к.* **1.** Таҙа, көр хәлгә килтереү;

һимертеү. *Малды көрәйтеү.* / *диал.* Ит ҡундырыу, һимертеү (кешегә ҡарата).

**2.** Ныҡлы, баҙыҡ итеү; күтәреү. *[Зилский] тауышын көрәйтеңкерәп, начальниктар тауышы менән: — Өмөт ҡайҙа? — .. тип ҡысҡырып ебәрҙе.* Ғ. Дәүләтшин. *Тәбиғәт матурлығы күңелдәрҙе көрәйтә.* Ф. Иҫәнғолов.

**КӨРӘК** *и.* Ҡаҙыу, көрәү өсөн ҡулланылған яҫы башлы, оҙон һаплы ҡул ҡоралы. *Ағас көрәк. Тимер көрәк. Көрәк һабы.* ■ *Игенде ат менән баҫып, көрәк менән елгәрә инек.* М. Тажи. *Йомран кеүек ер ҡаҙабыҙ, көрәк беҙгә бик кәрәк* (Бәйеттән). **Икмәк көрәге** ҡыҙыу мейескә икмәк ултыртыу өсөн ҡулланылған оҙон һаплы яҫы башлы ағас ҡорал. **Һалдат көрәге** ҡыҫҡа һаплы бәләкәй көрәк.

◆ **Көрәк оно** *диал.* гәрнис. **Көрәк һаҡал** *кар.* **һаҡал**[1].

**КӨРӘКЛӘҮ** *к.* **1.** Көрәк менән алыу. *Көрәкләп ташыу.*

**2.** *күсм. кар.* **көрәү** 2. *Һуҙ оҫталары бер сиселеп алһа, хазинаны бөртөкләп кенә түгел, көрәкләп килтереп алдыңа өйә.* К. Мәргән.

**КӨРӘЛЕҮ** *к.* **1.** *төш. кар.* **көрәү.**

**2.** Хәл ҡылымдың *-п* формаһында төп ҡылымға эйәреп «күп булып, күпләп» мәғәнәһен бирә. *Шәкирйәнде база мөдире итеп урләттеләр. Бына шунан һуң .. уларҙың өйөнә байлыҡ көрәлеп инә башланы.* М. Садыкова.

**КӨРӘМӘ** *и. диал.* **1.** Бағау.

**2.** Бүрәнә араһына мүк һыҙлыҡлай торған ағас ҡалаҡ.

**КӨРӘН** *с.* **1.** Ҡыҙҙырылған ҡәһүә төҫөндәге, ҡыҙғылт ҡара. *Ҡара көрән. Ҡыҙыл көрән. Һары көрән. Сейә көрән. Көрән яулыҡ.* ■ *[Уҡыусы] ҡыҙҙар көрән күлдәк кейеп, аҡ алъяпҡыс бәйләп, байрамса кейенеп килгән.* З. Биишева. *Ҡыҙыл ғына күндән йүгән төйҙөм, килешеп тора көрән дуңанға* (Халыҡ йырынан).

**2.** *диал.* Миләүшә төҫ; ҡыҙыл күк. *Көрән ҡара.* ■ *Талғын иҫкән дымлы ел иркенә көрән сиғын болғай сирендәр.* Ә. Вәли.

**3.** *диал.* Һор.

**КӨРӘНДЕ** *и.* Көрәп өйгән ҡар.

**КӨРӘНЛӘНЕҮ** *к.* Көрән төҫкә инеү, көрән булыу.

**КӨРӘНСӘЙ** *и. ирк.* Көрән ат. *Ерәнсәй ҙә менән ай көрәнсәй тибен тибә тауҙың үңерендә* (Халыҡ йырынан).

**КӨРӘНҺЫУ** *с.* Көрәнгә тартым. *Көрәнһыу төҫ.*

**КӨРӘҮ** *к.* **1.** Көрәк менән һоҫоп-һоҫоп ситкә алыу. *Ситкә көрәү.* ■ *Ҡар тәрән ултырған, уны көрәп ташламай тороп эскә инеү мөмкин түгел ине.* Т. Хәйбуллин. / Көрәк менән таҙартыу. *Ҡар көрәү. Юл көрәү.* ■ *Ҡапҡа алдын, тротуарҙы иртән көрәп өлгөрмәйһең, кис булыуға тағы ҡаплана.* Б. Бикбай.

**2.** *күсм.* Хәл ҡылымдың *-п* формаһында төп ҡылымға эйәреп «күпләп, күп итеп» мәғәнәһен бирә. *Аҡсаны көрәп алыу.* ■ *[Әбей — абыстайға:] Алла инде һиңә бәхетте көрәп-көрәп, итәк тултырып бирҙән.* Т. Хәйбуллин.

**КӨРӘШ** *и.* **1.** Билдәле ҡағиҙә менән кем йығарҙан башҡарылған көс һынаш; алыш. *Милли көрәш. Көрәшкә сығыу.* ■ *Көрәш үҙенән-үҙе ҙурайып китте. Йәш батырҙар көрәшкә исемле батырҙарҙы саҡырырға тотондо.* Ш. Шәһәр. *Алышта ла, көрәштә лә көс кенә түгел, таҫыллыҡ та кәрәк.* Ғ. Хөсәйенов. **Классик көрәш** *кар.* **классик. Көрәш биреү** көрәшкә сығыу. *Барсынһылыу ҡашына [егет] килһен, Барсынға көрәш бирһен.* «Алпамыша». **Көрәш тотоу** алышыу, көрәшеү. *Егет риза булып көрәш тотҡан. Былар ете көн, ете төн көрәшкән* (Әкиәттән).

**2.** Йәмғиәттең ҡапма-ҡаршы көстәре араһындағы алыш. *Политик көрәш.* ■ *Беҙҙең көрәш мал өсөн түгел, беҙҙең көрәш — синфи көрәш.* Д. Юлтый. *Ошо тормошто тыуҙырыу өсөн көрәштә ҡорбан булған иптәштәргә салют итеп, залп бирәйек.* Б. Хәсән. *Егерменсе йылдар башында, мәҫәләнән, рус һәм татар әҙәбиәтендә төрлө ағымдар көрәше киҫкенләшеп китә.* Ғ. Хөсәйенов.

**3.** Ауырлыҡты, ҡаршылыҡты еңеүгә, ниҙелер юҡ итеүгә, бөтөрөүгә йүнәлтелгән эш. *Тәртипһеҙлеккә ҡаршы көрәш. Бюрократизмға ҡаршы көрәш.* ■ *Тулҡынға ҡаршы көрәш оҙаҡ барған.* З. Биишева.

**4.** Ниндәйҙер маҡсатҡа йүнәлтелгән көсөргәнешле эш. *Тыныслыҡ өсөн көрәш.* ■ *Мин үҙемде Ленин эше өсөн көрәш ҡосағына бирҙем.* Р. Ниғмәти.

**5.** *күсм.* Бәхәс, үҙ-ара әйтеш. *Һуҙ көрәше.* ■ *Күберәк кинәйәнән торған был көрәште [Тимерғәле менән Үмәрҙең әйтешеүен] Гөлйөҙөм тулыһынса аңлай алманы.* Һ. Дәүләтшина.

**КӨРӘШЕҮ**[1] *к.* **1.** Билдәле ҡағиҙә буйынса билдән алып көс һынашыу; алышыу. *Бәйгелә көрәшеү. Билгау һалып көрәшеү.* ■ *Бик оҙаҡ көрәшкәс, Алпамыша бер килеп уң ҡулы менән Барсынды күтәреп алды, ти.* «Алпамыша».

**2.** Ҡаршы торған ижтимағи көс менән алышыу. *Дошман менән көрәшеү.* ■ *Күп ерҙәрҙә крәҫтиәндәр батша хөкүмәте менән көрәшергә күтәрелә, уларҙың түрәләр ҡулында ҡол булып торғолары килмәй.* Һ. Дәүләтшина. / Икәү-ара тартышыу, алышыу. *Аҡыллылар .. бар аҡылды көрәшергә саҡырғандар, ҡарап ҡарайыҡ: бер һылыуҙы еңер микән?* Ш. Бабич: *[Роза:] һеҙ унда кубизм да футуризм менән көрәшкәндә беҙ бында оппортунизм менән көрәшә торғайныҡ.* С. Агиш.

**3.** Ауырлыҡ, ҡаршылыҡ менән алышыу; еңеп сығырға көс һалыу. *Ҡоролоҡ менән көрәшеү.* ■ *[Айбулат] йөрәген өҙөп барған әрнеү менән көрәшеп тыныс булырға һәм Гөлйөҙөмдө лә тынысландырырға тырышты.* Һ. Дәүләтшина. / Ниҙелер юҡ итеү, бөтөрөү өсөн көс һалыу. *Эскелеккә ҡаршы көрәшеү. Наҙанлыҡҡа ҡаршы көрәшеү.*

**4.** Билдәле бер маҡсатҡа ирешеү өсөн ныҡышмалы эш алып барыу. *Хаҡлыҡ өсөн көрәшеү. Сифат өсөн көрәшеү.* ■ *Тыныслыҡты тик ятып түгел, ә көрәшеп алырға кәрәк уны.* Ә. Бикчәнтәев.

● *Еңгән кеше, еңдем, тимәҫ, көрәштем, тиер.* Әйтем.

**КӨРӘШЕҮ**[2] *к. урт. ярҙамл. кар.* **көрәү** 1.

**КӨРӘШСЕ** *и.* **1.** Көрәш ярышында ҡатнашҡан, көрәш менән шөғөлләнгән кеше. *Көрәшселәр .. ашап-эсеп көрәшкә көс йыя.* С. Мифтахов. *[Фәхри] көрәшсе ул, майҙандарҙа бәйге алып, маһайып өйрәнгән.* Б. Бикбай.

**2.** Ижтимағи көстәр араһындағы көрәштә ҡатнашҡан кеше. *Әҙерләймен алғы көндәр өсөн көрәшселәр — ҡыҙыл батырҙар.* Ғ. Амантай.

**КӨРӘШТЕРЕЛЕҮ** *к. төш. ҡар.* **көрәштереү.** *Яҙғы сәсеү бөткәс, ауылдарҙа бәйгеләр үткәрелә, аттар сабыштырыла, батырҙар көрәштерелә.* Д. Юлтый.

**КӨРӘШТЕРЕҮ** *к.* Үҙ-ара көрәшергә ыңғайлатыу, көс һынаштырыу. *Бер-береһе менән бик дуҫ йәшәгән, ти, былар [Әйләр хан менән Буләр хан]. Һунарға сығып, ҡош атып, бәйге яһап, ат саптырып, батырҙарын көрәштереп, көс һынаштырып, күңел асып көн иткәндәр, ти.* «Алпамыша».

♦ **Һүҙ көрәштереү** бәхәсләшеү, ҡаршы әйтеү. *Түрә әйткәс, Ҡарасәс һүҙ көрәштереп тора алманы.* Ғ. Дәүләтшин.

**КӨРӘШТӘШ** *и.* Көрәштә бергә ҡатнашҡан кеше. *Ленин мәңге йәшәр, көрәштәше, етәксеһе булып Өфөмдөң һәм Тыуған илемдең.* Я. Ҡолмой.

**КӨС** *и.* **1.** Йән эйәләренең физик эш йәки хәрәкәт башҡара алыу мөмкинлеге, һәләте; ҡеүәт, ҡарыу. *Көс бөтөү. Көс кереү. Көстән яҙыу. Көс еткеһеҙ.* ■ *Алышта ла, көрәштә лә көс кенә түгел, таҫыллыҡ та кәрәк.* Ғ. Хөсәйенов. *Айтуған менән Көнтуған икәүһе көрәшеп көс һынаша, ти. Айтуған Көнтуғанды күтәргән, ти. Ә Көнтуғандың Айтуғанды күтәрергә әҙ генә көсө етмәгән, ти* (Әкиәттән). / Кешенең һалған хеҙмәте. *Ҡул көсө. Кеше көсөнән файҙаланыу.* ■ *Шафиҡ тыуған ере өсөн үҙ көсөн йәлләмәне.* Я. Хамматов.

**2.** Берәй эш башҡара алырлыҡ рухи мөмкинлек, һәләт. *Бөтә көстө һалыу. Эшкә көс табыу.* ■ *Зәки Вәлиди тарафынан ҡуйылған кешеләр .. кантонда партия ойошмаларын булдырмаҫҡа бөтә көстәре менән ҡаршы торҙолар.* Т. Йәнәби. *Бесән эшләү ҡыҙығынан айнып өлгөрмәгән немецтәр, арыш өлгөргәс, яңы дәрт, яңы көс менән арыш эшенә тотоноп китте.* Ғ. Дәүләтшин. *Бала бит ул эшкә көс бирә, тормош йәме күберәк күренә.* Ғ. Сәләм. *«Хаҡлыҡ касан булһа ла бер табылыр әле»,— тип уйланы Сәғиҙә. Ошо уйҙар уға көс, ышаныс, түҙемлек бирҙе.* М. Тажи.

**3.** Берәй нәмәнең эш башҡарыуға булған физик мөмкинлеге; ҡеүәт. *Машина көсө. Ел көсө.* ■ *Ағын һыу көсө менән ҡыуылған йыуан бүрәнәләр, бер-береһен тығыҙлап, эткеләп, ашыға-ашыға алға аға.* И. Насыри. / Физик үҙенсәлектән барлыҡҡа килгән эшмәкәрлек һәләте. *Атом көсө. Ерҙең тартыу көсө. Электр көсө.*

**4.** Эш башҡарыусылар һанынан, күләменән килгән мөмкинлек. *Умарта күсенең көсө.*

**5.** Авторитет, власть һ. б. менән билдәләнгән ҡеүәт. *Коллектив көсө. Дәүләт көсө.* ■ *[Имай старосталыкты] ташларға кәңәш бирҙе. Ныяҙғол быға риза булманы. Ҡулында аҙыраҡ көс тә булмағас, хәҙер үк йомарлап ташларҙар тип ҡуркты.* Һ. Дәүләтшина. / Йәмғиәт тормошона йоғонто яһау һәләтенән килгән мөмкинлек; ҡеүәт. *Халыҡ массаларының хазинаһы булып әүерелгән алдынғы идеялар прогрестың хәрәкәт иттереүсе ҡеүәтле көсөнә әйләнә.* «Совет Башҡортостаны», 1985, 16 ноябрь. / Кешенең аңына йоғонто яһау һәләте; ҡеүәт. *Китап көсө. Һүҙ көсө. Әҙәбиәттең көсө.* ■ *Һынлы сәнғәт үҙенең эмоциональ көсө йәһәтенән айырыуса ҙур әһәмиәткә эйә.* «Ағиҙел», 1960, № 10. / Кешенең эш-ҡылығына тәьҫир яһау сараһы; ҡеүәт. *Ғәҙәт көсө.* ■ *Ислам дине дәүләт дине булған илдәрҙә дини йолаларҙы үтәтеү өсөн рәсми закон көсө файҙаланыла.* «Совет Башҡортостаны», 1970, 19 ноябрь.

**6.** Нимәгәлер ҡаршы торор, тәьҫир итер сара; ҡеүәт. *Сихри көс.* ■ *Мөхәббәтте еңер көс юҡ.* З. Биишева. / Тәнгә, ағзаға тәьҫир итеү һәләте. *Ағыу көсө. Дарыу көсө.*

**7.** Йәмғиәттең эш, тормошона йоғонто яһау хоҡуғы. *Документты үҙ көсөндә ҡалдырыу. Юридик көскә эйә булыу.* ■ *Юғарғы суд приговорҙы үҙ көсөндә ҡалдырҙы.* Х. Зарипов.

**8.** Ниҙеңдер ғәмәлләшеү кимәле, сағылыу дәрәжәһе. *Шартлау көсө. Яҡтылыҡ көсө.* ■ *Дөрләгән ялҡын көсөнән һиҫкәнеп уянды мазлум ил.* Ш. Фидаи. / Уй-тойғоноң ғәмәлләшеү, сағылыу кимәле. *Асыу көсө. Мөхәббәт көсө. Нәфрәт көсө.*

**9.** Ғәскәр, хәрби ҡеүәт. *Ҡораллы көстәр.* ■ *Ҡыҙыл Армия менән партизандарҙың берләшкән көсө эште тиҙ тотто.* Һ. Дәүләтшина.

**10.** *ғәҙәттә күпл.* Бер эш-маҡсат тирәһендә тупланған ижтимағи төркөм. *Демократик көстәр. Прогрессив көстәр. Реакцион көстәр.* ■ *Журналға [«Дәһриәгә»] үҙҙәренең ҡәләмдәре менән танылған күп кенә мәҙәни көстәр ҡатнашлыҡ итә.* Т. Йәнәби.

**11.** *күсм.* Ҡыйынлыҡ, ауырлыҡ. *[Гөләйшә:] Бер оло юлға төшөп алыуы көс. Юлға төшөп алһа, һин уға йөктө тейәй генә бир, тарта ул.* М. Хәйҙәров. *Күгәреп тә ятҡан күк арҡаны артылыуы атҡа көс булды* (Халыҡ йырынан).

♦ **Ат көсө** *ҡар.* **ат** [1]. **Етештереү көстәре** *ҡар.* **етештереү. Кеше көсө** *ҡар.* **кеше. Йән көскә** (*йәки* **көс менән**) бөтә булған көстө һалып. *Йән көскә йүгереү.* ■ *Аҡбурҙай .. ишектең кейеҙенән матҡып тешләп ала ла, йән көсө менән ишек келәһен аҡтара тартып, өйгә инә.* М. Буранғолов. **Көс ағасы** *диал.* тыйғыса. **Көс биреү** хуплап, ҡеүәт биреү. *Ҡарт ҡул сабып, балаға дәрт, көс биреп торҙо.* М. Тажи. **Көс килеү** 1) ауырлыҡ төшөп, зарарланыу. *Ауыр күтәрмә, көс килер;* 2) ауырлыҡ төшөү, ҡыйын булыу. *Йәнгә көс килеү. Намыҫҡа көс килеү.* **Көскә ултырыу** үҫеп нығыныу. **Көс ташлау** көсһеҙләнеү, хәлһеҙләнеү. *Күсәбә көс ташламаған, башында салт аҡыл.* Ғ. Ибраһимов. **Көс төшөү** 1) эштең төп өлөшө тура килеү, ауырлыҡ төшөү. *Колхоз эшендә хәҙер механизаторҙарға күберәк көс төшә;* 2) ауырлыҡ төшөп, зарарланыу. **Көстән килеү** *йәки* **көс етеү** хәлдән килеү. *Көс еткән тиклем ярҙам итеү. Көстән килгәнсә эшләү.* **Күкрәк көсө** кешенең үҙ хәләл көсө, үҙ хеҙмәте. *Аталарҙан бала йәшләй ҡалһа, күкрәк көсө менән мал таба* (Халыҡ йырынан). **Ҡара көс**

1) *шул уҡ* **ҡул көсө** (*ҡар.* **ҡул**); 2) реакцион ҡарашлы ижтимағи төркөм. *Ҡалкты ысын кояш, кипте йәш, ҡапланды ҡара көс йөҙ түбән!* Ш. Бабич. **Эшсе көсө** *ҡар.* **эшсе. Әйткәнгә көс** әйтһәң дә ҡыйын. — *Әйткәнгә көс,— тине Янгалычев,— бына Йомаҡаевты ҡарағыҙ. Уттай эш ваҡытында үгеҙ кеүек егетте күсер итеп алып киткән.* С. Агиш.

● *Атың барҙа елеп ҡал, көсөң барҙа йөрөп ҡал.* Мәҡәл. *Башыңда аҡылың аҙ булһа, ике аяғыңа көс килә.* Мәҡәл. *Туҡҡан көсөң буш булмаҫ, эшләмәй күңел хуш булмаҫ.* Мәҡәл. *Тәгәрмәс әйләнгәндә күсәренә көс төшөр.* Мәҡәл. *Үткер ҡылыс ҡынға көс, үтмәҫ ҡылыс йәнгә көс.* Мәҡәл. *Үҙемдеке тигәндә үгеҙҙәй ҡара көсөм бар.* Әйтем.

**КӨС-КӨС** *саҡр.* Көсөк саҡырғанда әйтелә.

**КӨСКӘ** *р.* Ҡыйынлыҡ, ауырлыҡ менән; саҡ. *[Егет] ташты көскә-көскә ҡуҙғатып, ситкә этҡән, ти* (Әкиәттән).

**КӨС-ҠЕҮӘТ** *и. йыйн.* Көс һәм ҡеүәт. *Көс-ҡеүәт артыу.* ■ *Көс-ҡеүәттең бөтәһе ерҙән инде, ҡеүәтте, тим, йәлләмәй биргән инде.* М. Кәрим. *Бәгиҙә Исхаҡтың һаҡал-мыйыҡ саҡ беленеп килгән йөҙөнә, көс-ҡеүәт инә башлаған күкрәгенә, беләктәренә ҡыҙыҡып, оҙаҡ ҡарай.* Ш. Янбаев.

**КӨСЛӨ** *с.* **1.** Физик көсө күп; ҡеүәтле. *Көслө кеше. Көслө ҡулдар. Көслө ат.* ■ *Ҡарағөләмбәт үтә көслө батыр икән, йөклө арбаны бер үҙе тартыр икән.* «Бабсаҡ менән Күсәк».

**2.** Рухи йәһәттән ныҡ, рухи яҡтан көсө булған; ныҡлы. *Көслө ихтыяр. Көслө характер.* ■ *Мисек, гәмбәр еҫе аңҡый, гәмбәр һиндә.., мөхәббәтле эҫе, көслө ҡан бар һиндә.* Ш. Бабич.

**3.** Хәрби яҡтан ныҡ, яҡшы ҡоралланған. *Көслө армия. Көслө отряд. Көслө ҡәлғә.* ■ *Тиҙ генә ғәскәр туплап, ҡаршы барып ҡарай был, әммә теге яҡ бик көслө булып сыға* (Әкиәттән).

**4.** Ижтимағи көсө һәм экономик мөмкинлеге ҙур булған; ҡеүәтле. *Көслө ил. Көслө дәүләт. Көслө колхоз.* ■ *[Былар] көслө ҡулаҡтар .. һәммәһе тип әйтерлек ялсы тоталар, тирә-яҡ менән сауҙа йөрөтәләр.* Ғ. Дәүләтшин. / Йәмғиәттәге урыны менән өҫтөн торған. *Һин [Сәлих] бәләкәй, шулай ҙа һәйбәтһең. Һин бит Әмирханов кеүек ҙур, көслө кеше менән көрәшергә теләйһең.* С. Агиш. // *Юҡтырһың да алла! Әгәр булһаң.., ирек бирмәҫ инең көслөләргә көсһөҙҙәрҙе былай таларға.* М. Ғафури.

**5.** Эш башҡарыу мөмкинлеге ҙур; ҡеүәтле. *Көслө мотор. Көслө машина. Көслө телескоп.* ■ *[Электр] теләһә тау-таш ваттыра, төндә таңдар аттыра.. Унан көслө илдә юҡ.* Ғ. Амантай. / Ныҡ тәьҫир итә торған; ҡеүәтле. *Көслө ағыу. Көслө бал. Көслө дарыу.* ■ *14 градус йылылыкта әсетелгән ҡымыҙ көслө ҡымыҙ була.* М. Ғөбәйҙуллин. / Аң, тойғоға йоғонто яһау һәләте ҙур. *Көслө әҫәр.* ■ *Русса яҙылған хат көслөрәк булыр төҫлө тойолған уға [Ғариф ағайға].* Б. Бикбай.

**6.** Эш башҡарыу мөмкинлеге ҙур (күскә ҡарата). *Көслө умарта.*

**7.** Булыуы, сағылыу кимәле ҙур, юғары дәрәжәлә булған. *Көслө ағым. Көслө ел. Көслө ҡайыш.* ■ *Паровоздарҙан сыҡҡан ҡуйы дегет төҫлө ҡап-ҡара төтөндәр, көслө янғынды хәтерләтеп, күккә олғаша.* М. Тажи. / Күңелде ныҡ биләп алған. *Көслө теләк. Көслө тойғо.* ■ *Уйҙар яҡты, яҡын йәшен һымаҡ, йөрәктәрҙә көслө кисереш.* Р. Ниғмәти.

**8.** Үҙ эшенең бөтө нескәлеген белгән; оҫта, һәләтле. *Көслө пианист. Көслө шахматист. Көслө яҙыусы.*

**9.** *р. мәғ. диал.* Бик яҡшы, тейешле дәрәжәлә. *Эш бик көслө ҡуйылған.* / Бик күп (йәнле нәмәләргә ҡарата). *Былтыр беҙҙә бүре бик көслө булды.*

♦ **Көслөнөкө замана** (*йәки* **донъя**) ҡулындағы хоҡуҡ, мөмкинлекте үҙ файҙаһына йүнәлткән кешегә ҡарата әйтелә.

● *Көслө көслөгә үсле.* Әйтем. *Осорғанға ел көслө, еңелгәнгә ир көслө.* Мәҡәл. *Үлемдән оят көслө.* Мәҡәл.

**КӨСЛӨК: көслөк менән** 1) көс ҡулланып, ирекһеҙләп. *[Гөлкәй:] Хан мине көслөк менән алып китергә килгән.* И. Ниғмәтуллин; 2) ауырлыҡ, ҡыйынлыҡ менән, ирекһеҙҙең көнөнән. *[Үмәр ҡарт] көслөк менән, тешләнеп риза булды.* Һ. Дәүләтшина.

**КӨСЛӨЛӨК** *и.* **1.** Ҙур көскә эйә булыуҙан, физик көстән килгән сифат. *Мәрҙән .. юрамал бүрәнәнең гел йыуан башынан күтәрә, уның көслөлөгөн күрһендәр, йәнәһе.* С. Поварисов.

**2.** Юғары кимәлдәге ижтимағи һәм экономик көскә эйә булыуҙан килгән хәл; ҡеүәт. *Илдең көслөлөгө.*

**3.** Сағылыу дәрәжәһе, булыу кимәле юғарылыҡтан килгән хәл (тәбиғәт күренештәре, уй-кисерештәргә ҡарата). *Елдең көслөлөгө Хистең тәрәнлегенә һәм көслөлөгөнә инаныу.*

**КӨСЛӨЛӘНЕҮ** *ҡ. ҡар.* **көсәйеү.**

**КӨСЛӘНЕҮ** *ҡ. ҡар.* **көсәйеү.**

**КӨСЛӘҮ** *ҡ.* **1.** Ирекһеҙләп мәжбүр итеү. *Баланы көсләп ашатыу.* ■ *[Батша — Заятүләккә:] Бындағы донъя оҡшамағас, ҡайтып кит һин үҙеңдең Балҡан тауыңа. Һине бер кем дә көсләп тотмай.* «Заятүләк менән Һыуһылыу».

**2.** Үҙеңде ирекһеҙләп берәй нәмәгә мәжбүр итеү. *Көсләп йылмайыу. Көсләп илау.* ■ *[Зөлхизә:] Йәнең һөймәгәс, көсләп яратып булмай икән шул.* Н. Иҙелбай.

**3.** Көс ҡулланып, енси мөнәсәбәткә мәжбүр итеү; йәбешеү, талау. *[Зәйнәпте] Заһир мулла үҙе көсләгән дә ҡорһағы беленә башлағас, ҡыуып сығарған.* А. Карнай.

**КӨСЛӘШЕҮ** *ҡ.* Үҙ ихтыярыңды көсләп тағыу. *Көсләшеп эшкә инеү.* ■ *Зөлхизә ирен ярып ҡарауға аяҡ-ҡулы менән ҡаршы төштө.. Врач та артыҡ көсләшмәне.* Н. Мусин.

**КӨСМӘН** *и.* Борам йәки һалдағы ҡойроҡ ишкәге.

**КӨСНӘ** [*рус.* гусли] *и.* Рус халҡының сиртеп уйнай торған күп ҡыллы музыкаль ҡоралы.

**КӨСӨГӘН** *и.* Ҡарсығалар ғаиләһенә ҡараған, оҙон осло ҡанатлы, суҡыш аҫты бәләкәй генә һаҡаллы, ҡараһыу һор төҫтәге ҙур йыртҡыс ҡош.

**КӨСӨК** [1] *и.* **1.** Эт балаһы. *Ата көсөк. Инә*

*көсөк.* ■ *Ала эт ике көсөгөн эйәртеп сыкты ла, ике генә өргәс, .. кире боролдо.* С. Агиш. *Рәми был этте бынан йыл ярым элек, өс айлык көсөк сагында һатып алғайны.* Х. Мохтар. / *диал.* Йорт эте. *Бәйле көсөк. Сәүек көсөк. Көсөк тотоу.*

**2.** *эйл. ф.* **көсөгөм** балаға иркәләп әйтелә. *«Туңғанһың бит, көсөгөм»,— тине Булат һәм [Тимерҙе] алама сәкмәне аҫтына алды.* В. Бикбай.

**3.** *кусм. мыҫк.* Балиғ булмаған йәш кеше. *[Байҙар — Таңғатарға:] Көсөк, беҙгә өйрәтергә әле һиңә!..* Ә. Вахитов. / Арттан ҡалмай тағылып йөрөгән кешегә әйтелә; эйәрсен. *[Әлим:] Көсөк бит мин, көсөк. Бер кәнтәйҙең [баяр кыҙының] артынан эйәргән көсөк.* С. Агиш.

♦ **Көсө еткәнгә көсөктәй** үҙенән көсһөҙ кешене ирекһеҙләгәндә, йәберләгәндә әйтелә. *[Йәмилә — Мөхәмәтғәлигә:] Үҙеңдән көслөләрҙең табанын яларҙайһың. Ә көсөң еткәнгә көсөктәй.* Ф. Исәнғолов. **Көсөк күлдәк** боронғо йола буйынса балаға тыуғас та кейҙерелә торған күлдәк. *Беҙ әхирәт әсәләр ... көсөк күлдәген ташлатып, яңы күлдәк бесәбеҙ* (Йола йырынан). **Оялы көсөк** бик берҙәм, уҫал булған туғанырыуға әйтелә.

● *Этенән күреп көсөгө өрөр.* Әйтем.

**КӨСӨК** [2] *и.* Тал сәскәһе. *Апрель. Йылға һәм күл буйы тугайҙарында өйкөм-өйкөм ултырған талдар көсөк сығарҙы.* «Совет Башҡортостаны», 1966, 16 апрель.

**КӨСӨКЛӘҮ** [1] *к.* **1.** Балалау (эткә ҡарата).

**2.** *кусм. һөйл.* Ҡыҙарып, сабыртып ярылыу (яҙ көнө ялан аяҡ һыу кискән балалар аяғында була).

**КӨСӨКЛӘҮ** [2] *к.* Сәскәләнеү, бөрөләнеү (талға ҡарата).

**КӨСӨРГӘНЕҮ** *к.* Ныҡ көс һалыу, көс һалып тырышыу. *Көсөргәнеп ҡыскырыу. Көсөргәнеп эшләү.* ■ *Гөлйөҙөм бик көсөргәнеп йөрөп маташһа ла, .. хәле бөтөп, кыуышка барып тәгәрәне.* Һ. Дәүләтшина. *[Шулгән ташты] күтәрырға .. көсөргәнеп маташкан, көсөн һалып айкашкан.., күтәрәлмәй ташлаған* «Урал батыр». / Берәй эшкә үҙ-үҙеңде ирекһеҙләп мәжбүр итеү; серәнеү. *Илһамланып түгел, көсөргәнеп кенә эшләйем.* Н. Мусин.

**КӨСӨРГӘНЕШ** *и.* **1.** Эшкә һалынған йәки талап ителгән ҙур көс, тырышлыҡ. *Көсөргәнеш менән эшләү.* ■ *Йәйәү йөрөү ныҡ көсөргәнеш талап итмәгән тәбиғи хәрәкәт төрө ул.* «Башҡортостан ҡыҙы» 1986, № 1.

**2.** *физ., тех.* Берәмеккә тигеҙ булған зарядты ҡырҙың бер нөктәһенән икенсе нөктәһенә күсергән ваҡытта башҡарылған эш миҡдары менән үлсәнә торған дәүмәл. *Ҙур көсөргәнеш. Механик көсөргәнеш. Магнит көсөргәнеше. Ток көсөргәнеше.*

**КӨСӨРГӘНЕШЛЕ** *с.* **1.** Күп көс һалып, ҙур иғтибар менән башҡарылған йәки ошоно талап иткән. *Көсөргәнешле хеҙмәт. Эш көсөргәнешле булды.* ■ *Удар ике айлык заданиены үтәү өсөн көсөргәнешле көрәш бара.* «Совет Башҡортостаны», 1985, 27 ноябрь.

**2.** Үҙ-ара мөнәсәбәт киҫкен хәлдә булған, хәл итеүҙе талап иткән; ҡаршылыҡлы, ауыр, киҫкен. *Көсөргәнешле хәл. Көсөргәнешле минуттар.* ■ *Башта әбей талғын ғына һөйләһә лә, көсөргәнешле ерҙәренә еткәс, кыҙып китте.* К. Мәргән. *Һәр минуты айға, һәр сәгәте йылға тиң булырлык көсөргәнешле көн үтте.* Я. Хамматов.

**КӨСӨРГӘНЕШЛЕК** *и.* **1.** *кар.* **көсөргәнеш** 1. *Заһит әйтәһе һүҙен ҙур көсөргәнешлек менән хәтеренә төшөрөргә тырышты.* Я. Хамматов.

**2.** Ҡаршылыҡлы, киҫкен мөнәсәбәттән килгән ауыр хәл. *Халык-ара көсөргәнешлеге.*

**КӨСТӘЛМЕШ** *и. диал. кар.* **ҡыҫтыбый** 2.

**КӨС-ХӘЛ** *и. йыйн.* Физик мөмкинлек; ҡеүәт. *[Егет] һыуҙы эскән икән, бөтөнләй сәләмәтләнеп көс-хәл инеп, аяғына баҫкан да .. киткән, ти* (Әкиәттән).

♦ **Көс-хәл менән** ҡыйынлыҡ, ауырлыҡ менән.

**КӨС-ХӘЛГӘ** *р. кар.* **көскә.** *[Юлсы:] Яланда һыргак ел үтәнән-үтә һуға. Көс-хәлгә килеп еттем.* М. Тажи.

**КӨСҺӨҘ** *с.* **1.** Физик көсө аҙ; кәрһеҙ, хәлһеҙ. *Көсһөҙ ат. Көсһөҙ кул.* ■ *Бер зәгиф, көсһөҙ, һөнәрһеҙ, буйға бөткән бәндә мин.* Ш. Бабич.

**2.** Рухи яҡтан йомшаҡ, ихтыяр көсө аҙ. *[Фәхри:] Көнләшмәм .. Көнсөллөк — көсһөҙ ирҙәр ҡылығы ул. Насар нәмә!* Б. Бикбай.

**3.** Ижтимағи көсө, экономик ҡеүәте аҙ булған. *Көсһөҙ ил. Көсһөҙ дәүләт. Көсһөҙ хужалык.*

**4.** Тәьҫир итеү көсө ҙур булмаған. *Көсһөҙ ағыу. Көсһөҙ кымыҙ.*

**5.** Булыу көсө, сағылыу дәрәжәһе ҙур булмаған. *Көсһөҙ нур. Көсһөҙ, йомшак ел. Көсһөҙ генә тауыш.* ■ *Көҙгө кояштың тауҙан артылып сығыуы менән, көсһөҙ кырау .. быуға әйләнеп күҙҙән юғала.* Ғ. Дәүләтшин.

● *Көсһөҙ көрәк һындырыр.* Әйтем. *Көсһөҙ эшен әхирәткә калдырыр.* Әйтем.

**КӨСҺӨҘЛӨК** *и.* **1.** Физик көс аҙ булыуҙан килгән сифат, хәлһеҙлек. *Көсһөҙгә хәнйәр күтәреү — көсһөҙлөккә билдә генә.* Н. Нәжми.

**2.** Берәй эш башҡарыуға рухи мөмкинлек, ихтыяр көсө булмауҙан килгән хәл. *[Ут эсенән] котолор өсөн берәй эш кылырға көсһөҙлөгөндө күрәһең, шуға инанаһың икән, .. ергә һыйыңырға ғына кала.* Д. Юлтый. **Енси көсһөҙлөк** енси яҡтан һәләтһеҙ булыу.

**КӨСҺӨҘЛӘНДЕРЕЛЕҮ** *к. төш. кар.* **көсһөҙләндереү.** *Көсһөҙләндерелгән вирус. Көсһөҙләндерелгән организм.*

**КӨСҺӨҘЛӘНДЕРЕҮ** *к.* **1.** Кем йәки нимәләр ижтимағи көсөн бөтөрөү, ҡеүәтен кәметеү. *Илде көсһөҙләндереү. Хәрби яктан көсһөҙләндереү. Экономик яктан көсһөҙләндереү. Көсһөҙләндереп бөтөү.*

**2.** Тәьҫир итеү мөмкинлеген кәметеү. *Ағыуҙы көсһөҙләндереү. Һеркәне көсһөҙләндереү. Рентген нурҙарын көсһөҙләндереү. Еҫене көсһөҙләндереү.*

**3.** Ниҙеңдер булыу, ғәмәлләшеү кимәлен тәүгe хәленән кайтыш итеү.

**КӨСҺӨҘЛӘНЕҮ** *к.* **1.** Көсһөҙгә әйләнеү, кәрһеҙләнеү, хәлһеҙләнеү. *Татлы һут йыйыуҙа, уны балга әйләндереүҙә, бала корттарҙы тәрбиәләүҙә катнашкан бал корттары бик тиҙ көсһөҙләнә, үлеп бөтә.* З. Байбурин.

**2.** Экономик һәм хәрби ҡеүәт кәмеү, ижтимағи көс бөтөү. *Ил көсһөҙләнгән. Империализмдың позициялары көсһөҙләнде.* ■ *Российялагы революцион хәрәкәт 1905 йылдың октябрендә дөйөм стачкага әүерелеп китә, унда меңәрләгән эшселәр катнаша.. Хөкүмәт көсһөҙләнә.* «Совет Башҡортостаны», 1967, 6 ғинуар.

**3.** Тәьҫир көсө, тәьҫир итеү мөмкинлеге кәмеү. *Агыу көсһөҙләнгән. Дарыу иҫкергән, көсһөҙләнгән.*

**4.** Ғәмәлләшеү, булыу көсө кәмеү, тәүге хәленән ҡайтыш булыу. *Дамбага бәрелеп тулкын көсһөҙләнде.* ■ *Мәзин аҙан хәбәрен һалды. Тик был тауыш кала шау-шауына күмелеп.., аҙандың һуңгы һүҙҙәре ялыккан, көсһөҙләнгән төҫлө генә булып туктанылар.* С. Агиш.

**КӨҪҺӨҘЛӘТЕҮ** *к. кар.* **көсһөҙләндереү.**

**КӨСӘЙЕҮ** *к.* **1.** Физик көс-ҡеүәт артыу, көс-ҡеүәткә эйә булыу. *[Акмырҙа] мискәләге һыуҙы эскәс, тагы ла көсәйеп китеп, ике башлы дейеүҙең кәүҙәһен тураклап, күбәләй итеп, өйөп куйган, ти* (Әкиәттән).

**2.** Ниндәйҙер эш башҡарырлыҡ көсө артыу, көслөгә әйләнеү. *Партизандар отряды көсәйҙе. Тыныслык яклылар сафы көсәйҙе.* / Экономик яҡтан ныгыныу, көс-ҡеүәте артыу; хәлләнеү. *Колхоз һуңгы йылдарҙа көсәйеп китте.* ■ *Тыңләшергә тырышып коҙаларга Фәйзуш карт та якшы көсәйҙе.* С. Ҡудаш.

**3.** Булыу, ғәмәлләшеү кимәле үҫеү, ғәмәлдәге көсө артыу. *Атыш көсәйҙе. Көрәш көсәйҙе. Тәндең кыҙыулыгы көсәйҙе. Хәрәкәт көсәйҙе.* ■ *Ут көсәйҙе, ул икенсе өйҙәргә йәйелде.* Д. Юлтый. / Уй-фекер, кисерештәрҙең ғәмәлдәге дәрәжәһе артыу. *Асыу көсәйҙе. Теләк көсәйҙе. Шик көсәйҙе.* ■ *Аллаярҙың .. борсолоуы көсәйгәндән көсәйҙе.* Ш. Шәһәр.

**КӨСӘЙТЕЛЕҮ** *к. төш. кар.* **көсәйтеү.** *Танктар менән көсәйтелгән пехота.*

**КӨСӘЙТЕҮ** *к.* **1.** Ниндәйҙер эш башҡарырлыҡ көс-ҡеүәт арттырыу; көслө итеү. *Армияны көсәйтәү. Тыныслык яклылар сафын көсәйтеү.* ■ *Халык контролен көсәйтеү .. совет йәмгиәтенең политик системаһын үҫтереүҙең төп йүнәлеше булып тора.* Башҡорт АССР-ының Конституцияһы, 1984. / Экономик яҡтан ныгытыу; көс-ҡеүәтте арттырыу, хәлләндереү. *Хужалыкты көсәйтеү. Илде көсәйтеү.*

**2.** Ғәҙәттәгенән көслөрәк итеү, ғәмәлдәге көсөн арттырыу. *Игтибарҙы көсәйтеү. Идеология эшен көсәйтеү.*

♦ **Көсәйтеү киҫәксәләре** *лингв.* айырым һүҙҙең мәғәнәһен көслөрәк иткән киҫәксәләр (мәҫ. **да, сөм-, тома-**).

**КӨСӘЙТКЕС** *и.* Бер-бер сығанаҡтан килгән энергия көсөн арттыра торған ҡорамал.

**КӨСӘЙТТЕРЕҮ** *к. йөкм. кар.* **көсәйтеү.**

**КӨСӘНДЕРЕҮ** *к.* Көс һалырға, көсәнергә мәжбүр итеү.

**КӨСӘНЕҮ** *к.* **1.** Ныҡ көс һалыу; серәнеү. *Көсәнеп күтәреү.* ■ *Зөлкәрнәй оҙон камыллы, тулы башаклы бойҙайҙарҙы көсәнеп тарта-тарта, манма һыуга батты.* Ғ. Дәүләтшин.

**2.** *кар.* **көсләү** 2. *Көсәнеп илау.*

**КӨҪӘЛЕҮ** *к. төш. кар.* **көҫәү** 1. *[Биртеккә йыйылган] һымак кына ашанды Салиханың үҙендә лә бар ине, шулай ҙа көҫәлгән катыкото уга окшаны.* Ж. Кейекбаев.

**КӨҪӘҮ** *к.* **1.** Күңел һораганды теләү. *Әсе көҫәү. Балык көҫәү.* ■ *[Һомай — Шүлгәнгә:] Кан көҫәгән, йәш түккән, .. үҫал йөрәгең бөтһөн, бәгерле йөрәк үҫһен.* «Урал батыр». *[Айһылыу — Һәүбәнгә:] Иркә кыҙҙарҙы ташлап, һулыган йөҙлө кыҙ көҫәп, нишләп килдең һин былай.* «Аҡбуҙат».

**2.** Ғәҙәтләнгәндә ҡыуыу. *[Ғәзимә:] Куй, куй, малды яман өйрәтмә, бер тышаһаң, гел шуны көҫәй ҙә тора ул.* Һ. Дәүләтшина.

♦ **Аш көҫәү** *кар.* **аш** [1] 1.

**КӨТМӘГӘНДӘ** *р.* Уйламағанда, ҡапыл. *Көтмәгәндә дуҫтар килеп китте,— көтмәгәндә.. Ниндәй якшы булыр ине — вакыт үтмәгәндә.* Н. Нәжми. *Буран шулай өс көн, өс төн которҙо ла бер мәлде, һис тә көтмәгәндә, баҫылды ла куйҙы.* Р. Ғабдрахманов.

**КӨТМӘҪТӘН** *р. кар.* **көтмәгәндә.** *Уйламаҫтан, көтмәҫтән, шәйләмәҫтән-нитмәҫтән .. булды бик ҙур үҙгәреш.* Ш. Бабич.

**КӨТӨК** [1] *с.* **1.** Оҙонлоғо, буйы килешһеҙ ҡыҫҡа; наҡыҫ. *Көтөк күлдәк. Көтөк итеп кыркыу.*

**2.** *диал.* Уйламай ғына ҡапыл әйтелгән, урынһыҙ (һүҙгә ҡарата). *Көтөк һүҙ. Көтөк кенә итеп әйтеү.*

**КӨТӨК** [2]: **көтә-көтә көтөк булыу** оҙаҡ көтөп алйып бөтөү.

**КӨТӨК** [3] *и. диал. кар.* **көсөк** [1] 1.

**КӨТӨЛМӘГӘН** *с.* Алдан билгеле булмаған, көтмәгәндә, иҫкәрмәҫтән булған. *Көтөлмәгән кунак. Көтөлмәгән хәл. Көтөлмәгән эш.* ■ *Тыңлагыҙсы, гармун уйнай кустым.. Гармун теле беҙҙең өй эсенә көтөлмәгән шатлык килтерә.* Ғ. Дәүләтов.

**КӨТӨЛӨҮ** [1] *к. төш.* **көтөү** [1] 1. *Көтөлгән хәбәр.*

**КӨТӨЛӨҮ** [2] *к. төш. кар.* **көтөү** [2]. *Мал көтөлгән ер.* ■ *Якшы азамат йорт көтһә, йорто имен көтөлөр* (Ҡобайырҙан).

**КӨТӨҢКӨРӘҮ** *к.* Кем йәки нимәнеңдер килерен, булырын белеп, көтә биреү. *Көн асылганын көтөңкөрәү.*

**КӨТӨПХАНА** *и. кар.* **китапхана.**

**КӨТӨР-КӨТӨР** *окш.* **1.** Эсәк буйында һауа йөрөгәндә сыҡҡан тауышты белдергән һүҙ. *Баланың эсе көтөр-көтөр килә.*

**2.** *кар.* **кетер-кетер.** *Көтөр-көтөр кәтермәс ашау.*

**КӨТӨРЛӘК** *и. диал.* Майға, ҡаймаҡҡа баҫҡан сөсө икмәк.

**КӨТӨРЛӘҮ** *к.* **1.** Көтөр-көтөр (1 *мәг.*) итеү, көтөр-көтөр килеү (эс-ҡарынға ҡарата); боғорлау.

**2.** Гөлдөрләү (ҡорға ҡарата). *Яҙ көндәрендә корҙарҙың көтөрләүе, һуйырҙарҙың такылдауы яңгырап тора.* «Совет Башҡортостаны», 1965, 2 июль.

♦ **Эс көтөрләү** *кар.* **эс.**

**КӨТӨҮ** $^{1}$ *к.* **1.** Килерен, булырын белеп, урында ҡалыу. *Көтөп алыу. Көтөп тороу. Көтөп ултырыу. Көтөп ятыу. Машина көтөү. Ямғыр туктағанды көтөү.* ■ *Әжәл көтөп ятыу хурлыҡтыр, ҡорал тотоп үлеү ҙурлыҡтыр.* М. Кәрим. *Эт алдан китә лә, [көтөүсене] туктап-туктап көтә, ти* (Әкиәттән). / Килергә йәки булырға тейеш тип тороу. *Хат көтөү. Хәбәр көтөү.* ■ *Ауыр ине оҙатыу. Тағы ла ауыр бер хәбәрһеҙ көтөп йәшәүе.* Р. Сафин. **Дүрт күҙ менән көтөү** бик ныҡ түҙемһеҙләнеп көтөү. **Күҙ ҙә ҡаш [булып] көтөү** *диал. кар.* **дүрт күҙ менән көтөү.** *Хәйҙәр .. ауылға почта килгәнен күҙ ҙә ҡаш көтөп алды.* М. Тажи.

**2.** Нимәгәлер иҫәп тотоу; өмөтләнеү. *Иртәгеһен бригадалар ял итер тип көткәйне Тимер Янһаров, ләкин тынғыһыҙ Фатима киреһенсә эш итте.* Б. Бикбай. *Синфи дошман совет власына .. ҡаршы булған төрлө контрреволюцион йырҙар, кәләмәстәр төҙөп, халыҡ араһына таратырға тырыша. Уларҙың бынан көткән маҡсаттары билдәле, әлбиттә.* Ғ. Амантай.

**3.** Киләсәктә тормошҡа ашырға тейеш булыу, алда тороу (киләсәктә буласаҡ эш-хәлдәргә ҡарата). *Көтә белгән кешене бәхетле осрашыу көтә ул.* И. Абдуллин.

♦ **Көтмәгән ерҙән** уйламағанда, көтмәгәндә. *Көтмәгән ерҙән ҡунаҡ килеп төштө.* **Көтөп тор булмаҫ,** тигән мәғәнәлә киҫкен итеп әйтелә. *[Зәйнәп:] Миңә анау тиҙәк тапатҡан өсөн биш тәңкәне тәки бирмәй бит ҡарун мулла. [Хөсәйен:] Бирер, бирмәй ни, көтөп тор!* Һ. Дәүләтшина. **Көт тә тор** ниҙеңдер булырына шик тотмағанда әйтелә. *[Ҡадир:] Трактористарҙың күпселегә йәш, быйыл тәү башлап руль тоталар, уларҙан бәләне көт тә тор.* Б. Бикбай.

● *Алланан көткән ут йотҡан, эшләп тапҡан тун теккән.* Мәҡәл. *Үҙеңдә айран булмаһа, кешелә ҡымыҙ көтмә.* Әйтем. *Күпте көтөп әҙҙән буш ҡалма.* Әйтем.

**КӨТӨҮ** $^{2}$ *к.* **1.** Күмәк малды утлауҙа әйләп, ҡарап йөрөтөү. *Быҙау көтөү. Йылҡы көтөү. Көтөү көтөү. Мал көтөргә ялланыу.* ■ *Ағайым минең көтөүсе, йылҡылар көтә. Яҙ еткәс тә ауылдан ул тауҙарға китә.* Ш. Бикҡолов.

**2.** Ҡарап, тәрбиәләп тотоу; аҫрау. *[Сурағол:] Донъяға һөйкөмһеҙ булып яратылыуым был тиклем таланһыҙ булыуым .. өсөн бәлки көтөп үҫтергән атам-әсәм гәйепләлер.* Т. Хәйбуллин. *[Егет ҡатынына:] Бына бер ҡарағош имгәнгән. Ҡанаты йүнәлгәнсе көтәйек,— тип келәткә индереп бикләп ҡуйған* (Әкиәттән).

**3.** *диал.* Һаҡлау, ҡарауыллау. *[Әнүәр:] Ни хәлдә генә йөрөйһөң, Шаһбал апа? Әллә магазин көтәһеңме? [Ҡарт:] Магазинды бит электр көтә.* А. Ғирфанов.

**4.** *һөйл.* Балалар уйынының хеҙмәтсе сифатындағы яғында йөрөү.

♦ **Донъя көтөү** тормош ҡороп йәшәү. *Донъя көтөрлөк булыу. Заманса донъя көтөү.* **Ил** (*йәки* **йорт**) **көтөү** илгә етәкселек итеү, ил башында тороу. **Өй көтөү** өй эштәрен ҡарау. *[Әбей — Алма батырға:] һин һунарға йөрөрһөң, мин өй көтөрмөн* (Әкиәттән).

● *Баланың буйын көтмә, аҡылын көт.* Мәҡәл. *Яҡшы аға ил көтһә, илгә дуға килтерер; яман аға ил көтһә, илгә дошман килтерер.* Мәҡәл.

**КӨТӨҮ** $^{3}$ *и.* **1.** Утлауҙа ҡараулы йөрөгән бер төркөм мал. *Ауыл көтөүе. Ферма көтөүе. Йылҡы көтөүе. Һыйыр көтөүе. Көтөүҙә йөрөгән мал. Малды көтөүгә ҡыуыу.* ■ *Саң борҡотоп мөңрәй-мөңрәй көтөү ҡайтты ауылға.* А. Игебаев. / Малдарҙың иҫәбен сама менән билдәләү берәмеге. *Ике көтөү һарыҡ. Өс көтөүле ҙур ауыл.* ■ *Көтөүсе әйтә бүрегә: «Берәй көтөү мал килтерһәң, тукмамам»,— ти* (Әкиәттән).

**2.** Төркөмләнеп йөрөгән йәнлек, хайуан йәки ҡоштар; өйөр. *Көтөү-көтөү мал.* ■ *Урал батырҙың өҫтөнә ен-пәрей көтөүе килеп ябырылды, ти.* «Урал батыр».

♦ **Бер көтөү** бик күп, күмәк; бер өйөр. *Бер көтөү бала. Баҡсаға бер көтөү кәзә ингән.* **Көтөү башы** өлкән көтөүсе. *Ҡуйҙар һимерә, ләкин уларҙан Ғәләүгә лә, көтөү башы Шамыҡ ҡартҡа ла өлөш теймәй.* Б. Бикбай. **Көтөүе менән** күмәк булып, өйөрөләшеп. *Көтөүе менән йөрөү.* **Эт көтөүе** *мыҫҡ.* өйкөләшеп йөрөгән күмәк кешегә ҡарата әйтелә.

● *Көтөү типкән мал булмаҫ.* Әйтем.

**КӨТӨҮЛЕК** *и.* Мал көтә торған ер. *Малды көтөүлектә йөрөтөү.* ■ *Культуралы көтөүлек һәр саҡ игтибарға, хәстәрлеккә, уның һәр ҡарышын хужаларса файҙаланыуға мохтаж.* «Совет Башҡортостаны», 1986, 8 июнь.

**КӨТӨҮСЕ** *и.* **1.** Көтөүҙе утлауҙа йөрөткән, мал көткән кеше. *Йылҡы көтөүсеһе. Ҡуй көтөүсеһе. Һарыҡ көтөүсеһе. Һыйыр көтөүсеһе.*

**2.** *һөйл.* Балалар уйынының хеҙмәтсе сифатын башҡарған яғы. *Көтөүсе булыу. Көтөүсе һайлау.*

♦ **Көтөүсе муҡсаһы** аҡ сәскәле ваҡ өскөл ҡуҙаҡлы үлән (дауа өсөн ҡулланыла).

**КӨТӨШӨҮ** *к. урт. ярҙамл. кар.* **көтөү** $^{2}$ 1. *Мал көтөшөү.*

**КӨТТӨРӨҮ** $^{1}$ *к.* **1.** Көтөргә, көтөп торорға мәжбүр итеү. *Оҙаҡ көттөрөү. Көттөрмәй килеү.*

**2.** Бик күп ваҡыт килмәй йәки булмай тороу. *Иген — Аҡназарҙың өй эсенә бик күп йылдар буйы көттөрөп килгән өлкән бер ул улъя.* Ғ. Дәүләтшин.

**КӨТТӨРӨҮ** $^{2}$ *к. йөкм. кар.* **көтөү** $^{2}$. *[Егет:] Ҡарағөлөмбәт биш йыл буйы ҡуй көттөрҙө хурлыҡ менән.* «Бабсаҡ менән Күсәк».

**КӨТӘККӘ** *р. диал.* Көтәһегә, үтескә. *Көтәккә алыу.*

**КӨТӘКӘН** *и. диал.* Бура туп (*кар.* **бура** $^{1}$).

**КӨТӘСӘК** *и. диал.* Үтес, бурыс. *Көтәсәкте алыу. Көтәсәкте түләү.* ■ *Көтәсәк иҫәбенә һыйланыусылар бөтөнләй егет булып алғандар.. [Уларҙың] йырлаған тауыштары приисканы яңғырата.* Я. Хамматов.

**КӨТӘҮЕЛЛӘҮ** *к.* Һағалап көтөп тороу. *Проходнойҙан сыкһам, тағы тегеләргә тап булдым, мине көтәүелләп торғандар күрәһең.* З. Хисмәтуллин. *[Буре] тештәрен ыржайтып, тамшаныП ҡуйҙы, кемделер көтәүелләп бер урында тапанды.* Ғ. Вәлиев.

**КӨТӘҮЛӘҮ** *к. диал. кар.* **көтөү** $^{2}$ 1. *Быҙау көтәүләү.*

**КӨТӘҺЕГӘ** *р.* Киләсәктә ҡайтарыу, түләү шарты менән. *Көтәһегә иген биреү. Көтәһегә аҡса алыу.*

**КӨФӨР** [*гәр.*] *и. дини* **1.** Динһеҙлек, дингә хилаф эш. *[Ҡарт:] Улай тимә, балам, көфөрөң башыңа етер.* Һ. Дәүләтшина. / Динһеҙ, дингә хыянат иткән кеше. *[Хәҙрәт:] Хаҡ мосолманыбыҙ барҙа, көфөргә ер һатмай кеше.* С. Мифтахов.

**2.** *с. мәг.* Ғәйепле, гонаһлы (хоҙай алдында). *Көфөр эш. Көфөр булыу.* ■ *[Хәлиулла — Салихҡа:] Беҙ һинең менән көфөр һүҙ шайтан вәсүәсәһе һөйләп ултырабыҙ, йәшен атып үлтермәһен.* С. Агиш. *Дүртенсе ҡиммәт нәмә шөкөр тигән, нигмәткә шөкөрһеҙлек көфөр тигән.* Аҡмулла. *[Табибә әбәй:] Закирымды, үҙенә-үҙе ҡул һалды тип, көфөр китте тип, кәберендә тыныс ятҡырмайҙар.* З. Биишева.

**КӨФӨРСӨЛӨК** *и. дини* Динһеҙлек, дингә хилаф эш. *Ауыл ҡатындарында, гөмүмән ауыл халҡында, рәсемгә төшөү ҙур көфөрсөлөктән иҫәпләнә ине.* Ғ. Хәйри.

**КӨФРАНА** [*гәр.*] *с. дини* Хоҙай ҡабул итмәҫлек; насар. *[Мулла:] Был бәндәләр [Айсыуаҡ менән Таңсулпан] көфрана эштәр ҡылып, йәгни зина ҡылып, бөтә ил йөҙөнә ҡара яғып, беҙҙе хур итте.* К. Даян.

**КӨФҮ** [*гәр.*] *с. иҫк.* Тиң, оҡшаш. *Һеҙ уларға көфү булмаҫлыҡ кеше түгел бит.* З. Өммәти. *Көндәрем йәмһеҙ, мөхитем булманы йәнгә көфү.* Ш. Бабич.

**КӨФФАР** [*гәр.*] *и. кар.* **кафыр.** *Мулла Зәйнәпкә бер ҡарап алды ла: «Һи, көффар, көффар, быны менән иш булғас, быға юлыҡҡас, булмаҫ, тәгәйен балаларҙы аҙҙырыр»,— тип уйланы.* И. Ғиззәтуллин.

**КӨҺНӘ** [*фарс.*] *с. иҫк. кит.* Иҫке, туҙған. *Жамәһе көһнә уланә бәд гөман мәтлуб имәс.* Аҡмулла.

**КӨШ, көш-көш** *ҡыу.* Ҡош-ҡортто ҡыуғанда әйтелә. *Хәсби апай балаҫ өҫтөнә менеп килгән тауыҡтарҙы: «Көш-көш!» — тип ҡыуҙы.* Т. Йәнәби.

**КӨШКӨ** *с. диал.* Ҡылансыҡ, ҡыйшаңлаҡ.

**КӨШКӨТӨҮ** *ҡ.* Көш-көш тип ҡыуыу; өшкөтөү.

**КӨШКӘЙЕҮ** *ҡ. диал.* Шымтайыу. *Йыйылған халыҡ: «Долой, долой!» — тип һөрәнләне. Зилский, көшкәйеп кенә, меҫкенләнеп, урынына барып ултырырға мәжбүр булды.* Ғ. Дәүләтшин.

**КӨШКӘНЛӘҮ** *ҡ. диал.* Сүсәнләү. *Көшкәнлеге сығыу.*

**КӨШМӨРӘҮ** *ҡ. диал.* Лыс һыу булыу.

**КӨШӨЛ** [1] *и.* Һуғылған ашлыҡ өйөмө. *Арыш көшөлө. Борсаҡ көшөлө.* ■ *Көшөл ятһа ырҙында, әләгеп ҡуйһа ямғырға, мөмкин унан, ашлыҡ сереп, ике ҡулһыҙ ҡалырға.* Ғ. Амантай.

**КӨШӨЛ** [2] *и.* **1.** Ҡуҡшел йөнлө кимереүсе ер-һыу йәнлеге; һыу сысҡаны. *Көшөл йылға буйҙарындағы яр тишектәрендә оя яһай, бик тиҙ үрсей.* Ҡ. Фәхретдинов. *Ҡулдә көшөл типтем тип, әтәлге ҡош маҡтанып, мәңге ҡыйғыр була алмаҫ.* «Юлай менән Салауат».

**2.** *диал.* Һуҡыр сысҡан.

**КӨШТӨР-ҠАШТЫР** [1] *оҡш.* Әкрен генә ҡыштырлаған тауышты белдергән һүҙ. *Көштөр-ҡаштыр килеү. Көштөр-ҡаштыр итеү.*

**КӨШТӨР-ҠАШТЫР** [2] *кар.* **көңгөр-ҡаңғыр.** *Көштөр-ҡаштыр донъя көтөү.*

**КӨШШӘ** *ымл.* Ҡош-ҡортто ҡыуғанда әйтелә. *Атайым: «Көшшә! Үләт тейгерҙәре!..» — тип ҡаҙҙарҙы һөрөп сығара ине.* Ғ. Ғүмәр.

**КРАБ** [*рус.* ⟨ *гол.*] *и.* Ун аяҡлы, дүрткел кәүҙәле диңгеҙ ҡыҫалаһы.

**КРАЕВЕ́Д** [*рус.*] *и.* Ил өйрәнеү менән шөғөлләнгән ғалим.

**КРАЙ** [*рус.*] *и.* СССР-ҙа ҙур административ-территориаль берәмек. *Краснодар крайы.*

**КРАКОВЯ́К** [*рус.* ⟨ *пол.*] *и.* Поляктарҙың милли бейеүе һәм шул бейеүҙең көйө. *Краковякка бейеү.*

**КРАН** [1] [*рус.* ⟨ *гол.*] *и.* **1.** Һауыттан шыйыҡлыҡ йәки газ алыу өсөн хеҙмәт иткән бороп бикләмәле трубка; һемәк. *Газ краны. Һыу краны. Кранды ябыу.*

**2.** Трубопроводты бикләй торған ҡорамал.

**КРАН** [2] [*рус.* ⟨ *нем.*] *и.* Ҙур, ауыр нәмәләрҙе күтәреп күсерә торған механизм; йөк күтәргес машина. *Башнялы кран. Кранда эшләү.*

**КРАНОВЩИ́К** [*рус.*] *и. кар.* **крансы.**

**КРАНСЫ** *и.* Кранда [2] эшләгән эшсе.

**КРА́ТЕР** [*рус.* ⟨ *гр.*] *и.* Лава бәреп сыҡҡандан хасил булған соҡор; янартау ауыҙы. *Ай өҫтөндә эреле-ваҡлы соҡорҙар күп. Формалары менән Ерҙәге вулкан кратерҙарына оҡшағанға уларҙы кратерҙар тип йөрөтәләр.* В. Сөләймәнов.

**КРАХМА́Л** [*рус.* ⟨ *нем.*] *и.* Ҡайһы бер үҫемлектәрҙән (мәҫ. дөгө, картуф, кукуруз һ. б.) алынып, аҙаҡ, химия промышленносында, кондитерлыҡ эшендә ҡулланыла торған он һымаҡ аҡ онтаҡ. *Картуф крахмалы. Дөгө крахмалы. Крахмал елеме.*

**КРАХМАЛЛАНЫУ** *ҡ. ҡайт. кар.* **крахмаллау.**

**КРАХМАЛЛАТЫУ** *ҡ. йөкм. кар.* **крахмаллау.** *Ҡулдәкте крахмаллатыу.*

**КРАХМАЛЛАУ** *ҡ.* Кейем-һалымды йылтыр, шыма итеү өсөн крахмалға маныу; ашлау. *Ашъяулыкты крахмаллау. Ҡулдәкте крахмаллау.*

**КРАХМАЛЛЫ** *с.* Крахмалға манылған, крахмалланған. *Крахмаллы яға.*

**КРЕВЕ́ТКА** [*рус.* ⟨ *фр.*] *и.* Ашарға яраҡлы бәләкәй диңгеҙ ҡыҫалаһы. *Креветка консерваһы.*

**КРЕ́ДИТ** [*рус.* ⟨ *лат.*] *и. бухг.* Керем-сығым кенәгәһенең бөтә сығым һәм бурыстар яҙыла торған уң яҡ бите; *киреһе* дебет.

**КРЕДИ́Т** [*рус.* ⟨ *лат.*] *и.* **1.** Аҡса йәки тауарҙы көтәһегә биреүгә нигеҙләнгән алыш-биреш. *Кредит магазины. Ҡыҫҡа сроклы кредит. Кредит алыу. Кредитҡа биреү. Кредит асыу. Дәүләт колхоздарға йыл һайын оҙаҡ сроклы кредит бирә.*

**2.** *фин.* Ниндәйҙер кәрәк өсөн бюджетта ҡаралған, бирелгән аҡса. *Төҙөлөш кредиты.*

◆ **Банк кредиты** предприятиеларға йәки айырым кешеләргә банк тарафынан асылған кредит. *Банк кредиты ҡайтарыу шарты менән генә би-*

*релә.* Дәүләт **кредиты** *эк.* дәүләт заемдарының бер системаһы.

**КРЕДИТО́Р** [*рус.* ‹ *лат.*] *и.* Кредитҡа аҡса, тауар биргән кеше йәки ойошма.

**КРЕ́ДО** [*рус.* ‹ *лат.*] *и.* Ҡараш, фекер нигеҙе. *Политик кредо. Шағирҙың эстетик кредоһы.*

**КРЕ́ЙСЕР** [*рус.* ‹ *гол.*] *и.* Көслө артиллерия, торпеда, мина, һәм ракета менән ҡоралланған тиҙ йөрөшлө ҙур хәрби карап. *Крейсер эскадраһы. «Аврора» крейсеры. Еңел крейсер.*

**КРЕ́ЙСЕРЛЫҠ: крейсерлыҡ тиҙлеге** самолёт һәм караптарҙың уртаса йөрөш тиҙлеге.

**КРЕ́КИНГ** [*рус.* ‹ *ингл.*] *и. тех.* **1.** Нефтте һәм нефть ҡалдыҡтарын (мәҫ. мазутты) махсус рәүештә эшкәртеп, бензин, газолин кеүек нәмә алыу ысулы.

**2.** Шул ысулды ғәмәлләштерә торған ҡоролма. *Крекинг заводы.*

**КРЕМ** [*рус.* ‹ *фр.*] *и.* **1.** Бит-ҡулға һөртә торған еҫле май; бит майы. *Биткә крем һөртөү.*

**2.** Күн аяҡ кейемдәрен таҙарта торған махсус май. *Итек кремы. Ҡара крем. Төҫһөҙ крем.*

**3.** Май, ҡаймаҡ йәки һөткә йомортҡа, шәкәр, какао һ. б. нәмә ҡушып туҡылған иҙмә (пирожный, торт бешергәндә ҡулланыла). *Кремлы торт. Сәтләүекле крем. Шоколадлы крем.*

**КРЕМАТО́РИЙ** [*рус.*] *и.* Мәйет яндырыу йорто. *Крематорий мейесе. Крематорийҙа яндырыу.*

**КРЕМА́ЦИЯ** [*рус.* ‹ *лат.*] *и.* Мәйеттең юғары температуралы махсус мейестә яндырылыуы.

**КРЕМЗӘ** *и. һөйл.* Кремнезём.

**КРЕМЛАУ** *к.* Крем (1, 2 мәғ.) менән майлау. *Битте кремлау. Итекте таҙартып кремлап ҡуйыу.*

**КРЕМНЕЗЁМ** [*рус.*] *и.* Кремнийҙың тәбиғәттә кварц, тау гәлсәре, аметист һ. б. минералдар рәүешендә таралған икеләтә әсемәһе.

**КРЕ́МНИЙ** [*рус.* ‹ *гр.*] *и.* Күп тау тоҡомдарының составында була торған химик элемент. *Кремний берләшмәләре.* **Кремний карбиды** кремний менән углерод берләшмәһе; карборунд.

**КРЕ́МНИЙЛЫ** *с.* Составында кремний булған. *Кремнийлы тоҙҙар.*

**КРЕОЗО́Т** [*рус.* ‹ *фр.*] *и.* Ағас йәки ташкүмерҙе томалап ҡыуыу юлы менән алынған майлы шыйыҡса (техникала, медицинала ҡулланыла).

**КРЕО́Л** [*рус.* ‹ *фр.*] *и.* **1.** Испания һәм Португалиянан Латин Америкаһына күсеп ултырған беренсе колонизаторҙар тоҡомо.

**2.** Испан менән индтан, рус менән алеут йәки эскимостан тыуған кеше.

**КРЕП** [1] [*рус.* ‹ *фр.*] *и.* **1.** Бик сираҡ ептән ҡытыршы итеп һуғылған ебәк йәки йөн туҡыма. *Ебәк креп. // Креп тауар.*

**2.** Үтә күренмәле һырлы ҡара туҡыма һәм шул туҡыманың траур ваҡытында беләккә бәйләй торған киҫәге.

**КРЕП** [2] [*рус.* крепь] *и.* Шахтала ер ишелеп төшмәһен өсөн ҡуйылған терәү рәүешендәге нығытма; таяу. *Забойҙың ике урынына креп һуҡҡандан һуң да емерелеү ҡурҡынысы бөтмәне.* Я. Хамматов.

**КРЕП** [3] [*рус.* крепость] *и. тар.* Ер һатыу, ер алыу тураһындағы ҡағыҙ.

**КРЕПДЕШИ́Н** [*рус.* ‹ *фр.*] *и.* Өҫтө һырланыбыраҡ торған йоҡа ебәк туҡыма. *Аҡ крепдешин. Биҙәкле крепдешин. // Крепдешин күлдәк. Крепдешин яулыҡ.*

**КРЕП-ЖОРЖЕ́Т** [*рус.* ‹ *фр.*] *и.* Сираҡ ептән һуғылған үтә күренмәле ебәк туҡыма. *Сәскәле креп-жоржет. // Креп-жоржет күлдәк.*

**КРЕПИ́ЛЬЩИК** [*рус.*] *и.* Шахтала креп һуҡҡан, таяу ҡуйған эшсе.

**КРЕПОСТНИ́К** [*рус.*] *и.* Крепостнойлыҡ хоҡуғын яҡлаған помещик.

**КРЕПОСТНО́Й** [*рус.*] *с.* **1.** Крәҫтиәндең помещикка тулы, бойондороҡло булыуына нигеҙләнгән. *Крепостной хужалыҡ.*

**2.** Помещик ҡул аҫтындағы; ирекһеҙ. *Крепостной крәҫтиән. Крепостной художник.*

**КРЕПОСТНО́ЙЛЫҠ** *и.* Крәҫтиәндең үҙен, хеҙмәтен һәм милкен помещик ҡарамағына ҡуйған ижтимағи ҡоролош. **Крепостнойлыҡ хоҡуғы** крәҫтиәндең үҙен, хеҙмәтен һәм милкен помещик ҡарамағына ҡуйған хоҡуҡ.

**КРЕ́ПОСТЬ** *и. ҡар.* **ҡәлғә.**

**КРЕП-САТИ́Н** [*рус.* ‹ *фр.*] *и.* Бер яғы йылҡылдап торған тығыҙ ебәк туҡыма. *Йәшел креп-сатин. // Креп-сатин күлдәк.*

**КРЕ́СЛО** [*рус.*] *и.* Ҡул һалырға яндауыры, терһәге булған киң ултырғыс. *Йомшаҡ кресло. Үргән кресло.* ■ *Сәлих Сабирович киң, уңайлы креслола тыныс ҡына папирос тартып ултыра.* С. Агиш.

**КРЕСТ** [*рус.*] *и.* **1.** *ҡар.* **тәре** [1].

**2.** Ҡушыу билдәһенә оҡшаған тамға. *Крест ҡуйыу. Крест менән билдәләү.*

**3.** *иҫк.* Тәре һымаҡ орден йәки миҙал. *Хасбулат олатай төргәктән «Георгиевский крест» менән «Ҡыҙыл Байраҡ» ордены алып, өҫтәлдең ҡап уртаһына һалып ҡуйҙы.* З. Биишева.

**КРИВОШИ́П** [*рус.*] *и. тех.* Этеү көсө менән тәгәрмәсте әйләндерә торған терһәкле механизм.

**КРИ́ЗИС** [*рус.* ‹ *гр.*] *и.* **1.** Киҫкен үҙгәреш, киҫкен күсеш. / Ауырыуҙың иң көслө, киҫкенләшкән мәле.

**2.** *эк.* Капиталистик хужалыҡта: етештерелгән тауарҙарҙың ваҡыт-ваҡыт кәрәктән тыш күп булып китеүенән, шуның һөҙөмтәһендә производствоның ҡыҫҡарыуынан, эшһеҙлектең артыуынан ғибарәт булған экономик хәл. *Аграр кризис. Донъя кризис. Экономик кризис.* ■ *Капитализмды кризис быуа, эшһеҙ ҡулдар ҡаға ишеген.* Б. Бикбай.

**3.** Нимәнеңдер етешмәүенән тыуған ҡыйын хәл, ҡытлыҡ. *Хәҙер беҙ металлургия өлкәһендә ҙур кризис кисерәбеҙ. Металһыҙ ҡорал эшләп булмай.* Д. Юлтый.

◆ **Политик кризис** халыҡтың хөкүмәт политикаһына бик ныҡ ризаһыҙлыҡ күрһәтеүенән ғибарәт булған илдәге киҫкен политик хәл. **Хөкүмәт кризисы** төрлө политик ҡаршылыҡтар һөҙөмтәһендә хөкүмәттең алмашыныуы.

**КРИМИНАЛИ́СТ** [*рус.*] *и.* Криминалистика өлкәһендә эшләгән белгес.

**КРИМИНАЛИ́СТИКА** [*рус.* ‹ *лат.*] *и.* Енәйәтте тикшереү, судҡа кәрәкле дәлилдәрҙе йыйыу

һәм өйрәнеү методтары тураһындағы фән. *Криминалистика техникаһы.*

**КРИМИНОЛО́ГИЯ** [*рус.* ⟨ *лат.*] *и.* Енәйәтселекте, уның сәбәптәрен, енәйәтсе шәхесен өйрәнә һәм енәйәтселекте киҫәтеү сараларын ҡарай торған фән.

**КРИПТОГРА́ММА** [*рус.* ⟨ *гр.*] *и.* Йәшерен тамғалар менән яҙылған яҙыу.

**КРИПТОГРА́ФИЯ** [*рус.* ⟨ *гр.*] *и.* Айырым кешеләр өсөн генә билгеле булған шартлы йәшерен тамғалар нигеҙендә яҙыуҙы үҙгәртеү ысулы; йәшерен тамғалар менән яҙыу ысулы.

**КРИПТО́Н** [*рус.* ⟨ *гр.*] Химик элемент, ҡатышмаусан газдарҙың береһе.

**КРИСТА́ЛЛ** [*рус.* ⟨ *гр.*] *и.* Тәбиғи төҙөлөшө менән күп ҡырлы ҡаты есем. *Алмас кристалдары. Боҙ кристалдары. Кристалға әйләнеү.*

**КРИСТАЛЛАНЫУ** *к. кар.* **кристаллашыу.**

**КРИСТАЛЛАШЫУ** *к.* Шыйыҡ йәки газ һымаҡ хәлдән кристалға әйләнеү, кристалл рәүешен алыу.

**КРИСТАЛЛИК** *с.* Кристалл рәүешендәге. *Кристаллик таш. Кристаллик ҡар.*

**КРИСТАЛЛО́ГРАФ** [*рус.*] *и.* Кристаллография буйынса белгес. *Кристаллографтар зөбәржәт, алмас, якут кеүек аҫыл таштарҙың аҫыллыҡ хикмәте кристалл киҫәктәренең симметрик хәлдә булыуынан тип иҫбатлай.* Ғ. Хөсәйенов.

**КРИСТАЛЛОГРА́ФИЯ** [*рус.* ⟨ *гр.*] *и.* Кристалдар һәм матдәләрҙең кристаллик хәлдә булыуы тураһындағы фән.

**КРИТЕ́РИЙ** [*рус.* ⟨ *гр.*] *и. кит.* Ниҙелер баһалауға нигеҙ булған билдә. *Яҙыусының әҙәби оҫталығын билдәләй торған критерийҙарҙың береһе — уның теле. Тел — яҙыусының төп ҡоралы.* Ә. Вәли.

**КРИ́ТИК** *и. кар.* **тәнҡитсе.**

**КРИТИ́К**[1]: **критик реализм** *шул уҡ* **тәнҡит реализм** (*кар.* **реализм** 2).

**КРИТИ́К**[2] *с.* Киҫкен үҙгәреш кисергән, кризис хәлендәге.

♦ **Матдәнең критик хәле** *физ.* матдәнең шыйыҡлыҡ менән газ араһында булған үҙенә бер төрлө хәле. **Критик температура** *физ.* матдәнең шыйыҡ хәлдән пар хәленә күсеү йәки улар араһындағы айырмалыҡ бөтөү температураһы.

**КРИ́ТИКА** *и. кар.* **тәнҡит.**

**КРОКЕ́Т** [*рус.* ⟨ *фр.*) *и.* Туп һуғыш уйыны (уйнаусылар икегә бүленә, һәр төркөм үҙ шарын, ағас сүкеш менән һуғып, билдәле бер тәртипкә ҡуйылған бәләкәй генә ҡапҡаларҙан үткәрергә тырыша). *Крокет һуғыу.* ■ *Ишек алдында приют ҡыҙҙары крокет уйнай ине.* Д. Юлтый.

**КРОКОДИ́Л** [*рус.* ⟨ *гр.*] *и.* Тропик һыуҙарҙа була торған ҡалын ҡабырсаҡ тиреле, кеҫәртке һымаҡ ҙур йыртҡыс йәнлек.

**КРО́ЛИК** [*рус.*] *и.* **1.** Ҡуянға оҡшаған кимереүсе йәнлек; йорт ҡуяны. *Ҡырағай кролик. Аҡ кролик.*

**2.** *с. мәғ.* Шул йәнлектең тиреһенән тегелгән. *Кролик бүрек. Кролик тун.*

**КРОНҒЛА́С** [*рус.* ⟨ *нем.*] *и. махс.* Оптик приборҙар өсөн ҡулланылған быяла.

**КРОНЦИ́РКУЛЬ** [*рус.* ⟨ *нем.*] *и.* **1.** Бәләкәй радиуслы түңәрәк һыҙа торған, винт менән нығытып ҡуймалы циркуль.

**2.** Деталдәрҙең тышҡы дәүмәлен үлсәй торған ҡорал (циркулгә оҡшаған).

**КРОНШТЕ́ЙН** [*рус.* ⟨ *нем.*] *и.* Түбәнге осон стенаға, бағанаға нығытып, кәштә, балкон кеүек нәмәне күтәртеп ҡуйған ауыш терәк; таяу.

**КРОСС** [*рус.* ⟨ *ингл.*] *и.* Тәбиғи шарттарҙа, ҡаршылыҡлы юлда үткәрелгән күмәк йүгереш. *Мотоциклистар кросы. Саңғысылар кросы.*

**КРОССВО́РД** [*рус.* ⟨ *ингл.*] *и.* Нумерлы сатраштарға тейешле һүҙҙәр табып яҙыуҙан ғибәрәт булған башуатҡыс уйын. *Кроссворд сисеү.*

**КРУ́ЖКА** [*рус.*] *и.* Стакан рәүешендәге тотҡалы һауыт.

**КРЫЖО́ВНИК** [*рус.*] *и.* **1.** Көрәнһыу йәшел төҫтәге әскелтем емешле сәнскәкле ҡыуаҡ. *Крыжовник сәскәһе.*

**2.** Шул ҡыуаҡтың емеше. *Крыжовник вареньеһы. Крыжовник компоты.*

**КРӘҪТИӘН** [*рус.* крестьянин] *и.* **1.** Ауылда тороп, ауыл хужалығы менән шөғөлләнгән кеше. *Колхозсы крәҫтиән. Крәҫтиән хужалығы.*

**2.** Революцияға тиклемге Россияла: һалым түләгән түбәнге ҡатлам вәкиле. **Урта хәлле крәҫтиән** ере эҙ булған һәм уны үҙ көсө менән эшкәрткән, мал-мөлкәте, тормошо уртаса етешлектәге крәҫтиән.

**КРӘҪТИӘНЛӘШЕҮ** *к.* Крәҫтиәнгә әйләнеү.

**КСЁНДЗ** [*рус.* ⟨ *пол.*] *и.* Польшалағы католиктар руханийы. *Быны һалдат атты алып китте, ксёндз килде ясин сығырға.* Ғ. Әмири.

**КСЕНО́Н** [*рус.* ⟨ *гр.*] *и.* Химик элемент, электротехникала һәм медицинала ҡулланыла торған, ҡатышмаусан газдарҙың береһе.

**КСИЛОЛИ́Т** [*рус.* ⟨ *гр.*] *и.* Магнезиялы цемент, бысҡы табы, асбест һ. б. нәмә ҡатыштырып эшләнгән төҙөлөш материалы. // *Ксилолит иҙән.*

**КСИЛОФО́Н** [*рус.* ⟨ *гр.*] *и.* Билдәле бер тәртиптә ҡуйылған ағас пластинкаларға бәләкәй ағас сүкештәр менән һуғып уйнай торған музыка ҡоралы.

**КУБ**[1] [*рус.* ⟨ *гр.*] *и.* **1.** Һәр яғы квадрат рәүешендәге алты ҡырлы геометрик есем / Шуға оҡшаш нәмә.

**2.** *мат.* Һандың үҙ-үҙенә ике тапҡыр ҡабатландығы, һандың өсөнсө дәрәжәһе. *Кубка күтәреү. Өстөң кубы — егерме ете. Куб тамыры.*

**КУБ**[2] [*рус.*] *и.* Шыйыҡлыҡты ҡайната йәки эҫетеп ҡыуа торған цилиндрик һауыт. *Балаларға һыу ҡайнатыу өсөн мәктәпкә ҡаҙан урынына куб ҡуйҙырып, усаҡ сығарҙылар.* С. Ҡудаш.

**КУБА́НКА** [*рус.*] *и. һөйл.* **1.** Түбәһенә буҫтау йәки күн ҡуйып, түңәрәкләп бәрәс тиреһенән теккән ҡолаҡһыҙ текә бүрек. *Ул [подполковник] иңбашына казак буркаһын һалған, башында ҡыҙыл түбәле кубанка.* Ә. Ихсан.

**2.** *кар.* **ҡобан.**

**КУБАТУ́РА** [*рус.*] *и.* Ниҙеңдер кубик үлсәүгә һалынған дәүмәле. *Бүлмәнең кубатураһы.*

**КУ́БИК** [*рус.*] *и.* **1.** Өс яғы (буйы, арҡырыһы, бейеклеге) бер сантиметрға тиң булған дәүмәл үлсәү берәмеге. *Ике кубик һеркә эссенцияһы.*

**2.** 1943 йылға тиклем Совет Армияһында ке-

се комсоставтың петлицаһына ҡуйылған звание билдәһе.

**КУБИК** *с.* Кубҡа[1] (2 мәғ.) мөнәсәбәтле. *Кубик берәмек. Кубик сантиметр.*

**КУ́БОК** [*рус.*] *и.* **1.** Борон шарап эсеү өсөн тотолған һауыт. *Батшаның үҙенә лә шарапты элеккесә алтын кубок менән түгел, ә ошо көршәк менән биргәндәр.* З. Биишева.

**2.** Ярышта еңгәндәргә бүләк итеп бирелә торған затлы махсус һауыт. *Күсмә кубок.*

**КУБОМЕ́ТР** [*рус.*] *и.* Өс яғы (буйы, арҡыры һы, бейеклеге) берәр метрға тиң булған дәүмәл үлсәү берәмеге. *Ун кубометр ағас.*

**КУ́БРИК** [*рус.* ⟨*гол*] *и.* **1.** Караптағы экипаждың торлаҡ бүлмәһе.

**2.** 18—19 быуаттарҙа елкәнле хәрби караптағы түбәнге палуба.

**КУ́ЗЛА** [*рус.* козлы] *и.* **1.** Кырандас йәки кашауайҙағы күсер урыны. *Ҡапҡа төбөнә егеүле ат килеп туҡтаны. Кузлала ултырған ун дүрт — ун биш йәшлек малай тәҙрәгә ҡул болғап ҡысҡырҙы.* М. Тажи.

**2.** Күпер, баҫма кеүек нәмәнең аҫтына арҡысаҡлап ҡуйылған терәү. *Күперҙе кузлаға ултыртыу.* ■ *Һал менән .. алып ҡайтҡан ағастарынан [Сәлим] баҫманы ҡороп та ҡуйҙы. Ҡыҙҙар .. кузлаларын ултыртышты.* И. Ғиззәтуллин. / Утын һалып быса торған дүрт тағанлы ҡулайлама.

♦ **Кузлаға ҡуйыу** бер нисә мылтыҡты баштары менән терәтеп, бер-береһенә һөйәп ҡуйыу.

**КУЗЛАУАЙ** [*рус.* козловый] *с.* Кәзә күненән тегелгән. *Кузлауай ҙа итек, ай еҙ даға, баҫҡан ғына һайын ҡом туҙа* (Халыҡ йырынан).

**КУЗНА** *и. диал.* Бәкәлсәй.

**КУ́ЗОВ** [*рус.*] *и.* Автомашинаның йөк тейәй йәки кешеләр ултырып йөрөй торған өҫкө өлөшө. *Йөк машинаһының кузовы.*

**КУКУРУЗ** [*рус.* кукуруза] *и.* **1.** Башаҡлылар ғаиләһенә ҡараған сәкән башлы, йыуан оҙон һабаҡлы баҫыу үҫемлеге. *Кукуруз силосы. Кукуруз сәкәне.*

**2.** Шул үҫемлектең орлоғо. *Кукуруз майы. Кукуруз оно.*

**КУЛА́К** [*рус.*] *и.* Ярлы кеше көсөнән файҙаланған бай крәҫтиән. *[Ямалдың] йәшлеге кулактарҙа батраклыҡта йөрөп үткән, тормош рәхәтлеген күрмәгән.* М. Тажи.

**КУЛАЧО́К** [*рус.*] *и. тех.* Машинала берәй механизмды этеү көсө менән хәрәкәтләндерә торған деталь.

**КУ́ЛИ** [*рус.* ⟨*һинд.*] *и.* Ҡайһы бер Азия илдәрендәге йөк ташыусы ҡара эшсе. *Арба тартып барған саҡта урам урталай, Шанхай урамында ярлы кули бер минутҡа ғына туҡтала.* Х. Ҡунаҡбай.

**КУЛИНА́Р** [*рус.*] *и.* Аш-һыу оҫтаһы. *Кулинарҙар мәктәбе.*

**КУЛИНА́РИЯ** [*рус.* ⟨*лат.*] *и.* **1.** Аш-һыу әҙерләү эше. *Кулинария курстары.*

**2.** *йыйн.* Аҙыҡ-түлек. *Кулинария магазины.*

**КУЛИ́СА** [*рус.* ⟨*фр.*] *и.* **1.** Сәхнә декорацияһының ике яҡ ҡабырғалағы ҡат-ҡат булып торған өлөшө.

**2.** *а. х.* Баҫыу ерен һыуыҡтан, ҡоронан һаҡлау һәм ҡар тотоу өсөн рәт-рәт итеп сәскән көнбағыш, кукуруз кеүек оҙон һабаҡлы үҫемлек һыҙаттары. *Кулиса үҫемлектәре. Кулисалы пар.*

**КУЛО́Н**[1] [*рус.* ⟨*фр.*] Электр зарядын үлсәү берәмеге.

**КУЛО́Н**[2] [*рус.* ⟨*фр.*] *и.* Нескә сынйыр менән муйынға тағыла торған биҙәүес.

**КУЛУА́Р** [*рус.* кулуары ⟨*фр.*] *и.* Парламент, театр йортондағы оло залдың ян бүлмәләре (ял итеү, һөйләшеп ултырыу өсөн).

♦ **Кулуарҙа һөйләшеү** рәсми һөйләшкәндән һуң үҙ-ара фекер алышыу.

**КУЛЬМИНАЦИОН** [*рус.* кульминационный] *с.* Иң көсөргәнешле, юғары кульминацияға еткән. *Әҫәрҙең кульминацион өлөшө.* **Кульминацион нөктә** *кар.* **кульминация** 2.

**КУЛЬМИНА́ЦИЯ** [*рус.* ⟨*лат*] *и.* **1.** *астр.* Планетаның күк меридианын киҫеп үтеүе.

**2.** Хәл-ваҡиғаның иң көсөргәнешле, киҫкен мәле; юғары нөктә.

**КУЛЬТ** [*рус.* ⟨*лат.*] *и.* **1.** Кешенең ниҙелер аллалаштырып табыныуы һәм табыныу йолалары. *Бүре культы. Ҡояш культы.*

**2.** Кемгә йәки нимәгәлер табыныу, уны ҙурлау нигеҙендә барлыҡҡа килгән мөнәсәбәт. *Матурлыҡ культы. Сәнғәт культы. Шәхес культы.*

**КУЛЬТИВА́ТОР** [*рус.* ⟨*фр.*] *и.* Баҫыу ерен ҡый үләндәренән таҙартыу, рәт араларын йомшартыу өсөн ауыл хужалығында ҡулланылған тағылма ҡорал. *Дисҡылы культиватор. Табанлы культиватор. Тәпеле культиватор. Ат культиваторы. Трактор культиваторы.* ■ *Яҙ ҡоро килгәндә сәсеү алдынан ерҙе культиватор менән эшкәртергә кәрәк.* „Совет Башҡортостаны", 1965, 29 апрель.

**КУЛЬТИВАТОРЛАНЫУ** *к. төш. кар.* **культиваторлау.**

**КУЛЬТИВАТОРЛАУ** *к.* Культиватор менән эшкәртеү.

**КУЛЬТИВА́ЦИЯ** [*рус.*] *и. а. х.* Ерҙе культиватор менән эшкәртеү эше. *Культивация үткәреү.*

**КУЛЬТМА́ССОВЫЙ** [*рус.*] *с.* Халыҡтың культураға бәйле ихтыяждарын үтәгән. *Культмассовый сектор. Культмассовый эш.*

**КУЛЬТПОХО́Д** [*рус.*] *и.* Коллективтың театр, музей кеүек ергә күмәкләп барыуы. *Культпоход ойошторpermissionoу. Театрға культпоход яһау.*

**КУЛЬТУ́РА** [*рус.* ⟨*лат.*] *и.* **1.** Кешелектең тормош шарттары нигеҙендә барлыҡҡа килгән рухи, матди һәм фәнни ҡаҙаныштары. *Милли культура. Прогрессив культура. Культура тарихы.* / Айырым халыҡ йәки синыфтың билдәле бер дәүерҙе эсенә алған рухи, матди һәм ижтимағи ҡаҙаныштары. *Боронғо Египет культураһы. Социалистик культура.*

**2.** Ниндәй ҙә булһа эшмәкәрлектең үҫеш кимәле, камиллыҡ дәрәжәһе. *Телмәр культураһы. Игенселек культураһы. Хеҙмәт культураһы өсөн көрәш.*

**3.** Аң-белемле кешенең талаптарына ярашлы тормош шарттары. *Ҡала культураһы.* ■ *Культураһыҙ муллыҡ — ялангас ул, ялангас.* Б. Бикбай.

**4.** Аң-белем кимәле; уҡымышлылыҡ. *[Нови-*

*ков:] Күгәрсендәрем, ниндәй матур яҙалар бит. Ундай матур һүҙҙәрҙе ҡайҙан һайлағандар? Хәйер культура шул, культура.* Д. Юлтый. / Билдәле тәрбиә күнекмәһе; тәрбиәлелек. *Культураға өйрәнеү.* ■ *Халыҡ культураһы менән кешеләрҙең тышҡы культураһы араһында ныҡ бәйләнеш бар.* Ф. Тимергазин.

**5.** Аң-белем таратыуға, сәнғәткә бәйле эшкә ҡарата әйтелә. *Культура министрлығы. Культура ойошмалары. Культура эшмәкәре.*

**6.** Сәсеп үҫтерә, игелә торған үҫемлек. *Бөртөклө культуралар. Майлы культуралар. Түтәл культуралары.* **Техник культура** промышленносҡа сырье бирә торған үҫемлек.

♦ **Культура йорто** халыҡтың культураға бәйле ихтыяждарын хеҙмәтләндергән йәмғиәт йорто. **Физик культура** физик күнегеүҙәр ярҙамында тәнде сыныҡтырыу, тәрбиәләү шөғөлө.

**КУЛЬТУ́РА-АҒАРТЫУ** *с.* Аң-белем таратыу эшенә бәйле. *Культура-ағартыу ойошмалары. Культура-ағартыу эше.*

**КУЛЬТУРАЛАШТЫРЫУ** *к.* Тейешле тәрбиә, аң-белем биреп, культуралы итеү.

**КУЛЬТУРАЛАШЫУ** *к.* Тейешле тәрбиә, аң-белем алыу, культуралы булыу.

**КУЛЬТУРАЛЫ** *с.* **1.** Тейешле аң-белемгә, культураға эйә. *Юғары культуралы кеше. Культуралы итеп йәшәү. Үҙеңде культуралы итеп тотоу.* ■ *[Ҡатын Сәлихҡа:] Һин дә бар шунда, культуралы йәштәр менән аралашырһың.* С. Агиш.

**2.** Сәсеп үҫтерелә торған. *Культуралы үҫемлектәр.*

**КУЛЬТУ́РНИК** [*рус.*] *и. һөйл.* Санаторий, ял йорттарында, культура эштәре алып барған хеҙмәткәр. *[Спартак] сак ҡына һүҙ оҫтаһы, сак ҡына йырсы, бейеүсе һәм баянист. Йыйып ҡына әйткәндә — ял йорттары өсөн ҡойоп ҡуйған культурник.* Ф. Иҫәнғолов.

**КУЛЬТУРНИКЛЫҠ** *и.* Революцияға тиклемге Россияла халыҡ мәнфәғәте өсөн булған көрәште аң-белем таратыу эше менән генә сикләргә тырышҡан, буржуаз интеллигенция араһында таралған ағым.

**КУНЖУ́Т** [*рус.* ⟨ *фарс.*] *и.* **1.** Орлоғонан май алыу өсөн үҫтерелгән оҙон һабаҡлы йылы яҡ үҫемлеге. *Кунжут сәсеү.*

**2.** Шул үҫемлектең орлоғо. *Кунжут майы.*

**КУПЕ́** [*рус.* ⟨ *фр.*] *и.* Пассажир вагонының өс-дүрт кеше өсөн иҫәпләнелгән айырым бүлмәһе.

**КУПЛЕ́Т** [*рус.* ⟨ *фр.*] *и.* **1.** Шиғри әҫәрҙең рифма менән берләштерелгән бер нисә юллыҡ бер өлөшө. *Ике куплетлы йыр.*

**2.** *купл.* Көндәлек тормошҡа ҡарата сығарылған, таҡмаҡ рәүешендәге сатирик йәки юмористик йырҙар.

**КУПО́Н** [*рус.* ⟨ *фр.*] *и.* **1.** Ҡиммәтле ҡағыҙҙың процент түләтеү өсөн йыртып алына торған талоны.

**2.** Билдәле бер кейем тегеүгә йәтешләп сигелгән йәки биҙәк һалынған бесеүле тауар. *Күлдәклек купон. Алъяпҡыс купоны.*

**КУПОРО́С** [*рус.* ⟨ *лат.*] *и.* Ҡайһы бер көкөрт кислотаһы тоҙҙарының техник исеме. *Баҡыр купоросы. Купорослы руда.*

♦ **Купорос майы** ҡуйы көкөрт кислотаһының элекке атамаһы.

**КУ́ПЧИЙ** [*рус.*]: **купчий ҡағыҙы** революцияға тиклемге Россияла: ер, ҡаралды кеүек мөлкәтте һатыу-алыу хаҡында төҙөлгән, нотариус тарафынан раҫланған килешеү ҡағыҙы. *[Ер һатыу тураһындағы] купчий ҡағыҙына башҡорттар атаған межалар түгел .., яңы межалар исеме яҙылған булып сыҡты.* Ғ. Хөсәйенов.

**КУПЮ́РА** [*рус.* ⟨ *фр.*] *и. фин.* Баһаһы күрһәтелгән ҡағыҙ аҡса, облигация йәки башҡа ҡиммәтле ҡағыҙ. *Ваҡ купюра. Өс һумлыҡ купюра.*

**КУРАНТ** [*рус.* куранты ⟨ *фр.*] *и. гәҙәттә купл.* Көй менән һуға торған ҙур башня йәки стена сәғәте. *Кремль куранттары.*

**КУРА́ТОР** [*рус.* ⟨ *лат.*] *и.* Берәй эштең барышын тикшереп, күҙәтеп тора торған кеше. *Курс кураторы* (юғары уҡыу йортонда).

**КУРБА** *и.* Ат аяғында була торған ауырыу.

**КУРГА́Н** [*рус.*] *и. ҡар.* **ҡурган.**

**КУРД** *и.* Яҡын Азия илдәрендә һәм Азербайжанда, Әрмәнстанда һәм Төрөкмәнстанда йәшәгән халыҡ һәм шул халыҡтың бер кешеһе (иран телдәренең береһендә һөйләшә). *Курд ҡатыны. Курд теле.*

**КУРИН** [*рус.* курень] *и. диал.* Урман ҡырҡыу, ағас әҙерләү эше. *Куринга ебәреү. Куринда эшләү.* **Курин ҡырҡыу** урман ҡырҡыу, ағас әҙерләү. *Ғәлим йәштән йәтим ҡалды. Уға өс йәш булғанда атаһын курин ҡырҡҡанда ағас баҫып үлтерҙе.* С. Ханов. / Урманда ағас ҡырҡҡан урын.

**КУ́РИЯ** [*рус.* ⟨ *лат.*] *и.* Буржуаз илдәрҙә һәм революцияға тиклемге Россияла: милке, милләте һәм башҡа яғы буйынса бүленгән һайлаусылар төркөмө.

**КУРМЫ** [*рус.* корм] *и. һөйл.* Мал аҙығы. *Малдың курмыһы бөткән.*

**КУРО́К** [*рус.*] *и.* Атыу ҡоралындағы затворҙың пистонға һуға торған өлөшө; сирткес.

**КУРО́РТ** [*рус.* ⟨ *нем.*] *и.* Тәбиғи шарттары шифалы булып, ял итеү, дауаланыу өсөн файҙаланылған урын. *Курортта дауаланыу. Янғантау курорты.* **Курорт карточкаһы** курортҡа киткән кешенең ауырыуҙары тураһында яҙылған ҡағыҙ.

**КУРС** [*рус.* ⟨ *лат.*] *и.* **1.** Юғары уҡыу йорттарында уҡытылған берәй фәндең йәки уның бүлегенең системалы рәүештә тулы биреләше һәм шуның дәреслеге. *Партия тарихы курсы. Физика курсы.* ■ *Фатима агробиологиянан ҡыҫҡаса курс уҡыған Ожегановты иҫенә төшөрҙө.* Б. Бикбай.

**2.** Уҡыу-уҡытыуҙың тулы бер циклы, күләме. *Урта мәктәп курсы.*

**3.** Юғары йәки махсус урта уҡыу йортоноң бер баҫҡысы һәм унда уҡыусы студенттар. *Беренсе курс студенты.* ■ *Сәйҙел диплом алды, Зәйнәп күсте һуңғы курсҡа.* Ғ. Сәләм. **Курс эше** студенттың билдәле бер темаға курс өсөн яҙған эше. / Берәй һөнәр биргән ҡыҫҡа ваҡытлы уҡыу йорто. *Уҡытыусыларҙы камиллаштырыу курсы.* ■ *[Егеттәр] армиянан ҡайтҡас, бергәләп электриктар курсын бөткәндәр.* Ф. Әсәнов.

**4.** Тулы бер дауаланыу циклы. *Бер курс алой уколы алыу.*

**5.** СССР-ҙа: ҡиммәтле ҡағыҙҙарҙың дәүләт

тарафынан билдәләнгән хаҡы; капиталистик илдәрҙә: ҡиммәтле ҡағыҙҙарҙың биржала билдәләнгән хаҡы.

**КУРСА́НТ** [*рус.*] *и.* **1.** Курста уҡыған кеше. *Фәтхуллин Ватан һуғышын авиация училищеһендә ҡаршы алды. Курсант ине Әнүәр ул саҡта, осоусы булырға әҙерләнә ине.* Ш. Бикҡол.

**2.** Хәрби мәктәптә уҡыған кеше. *Пехота училищеһы курсанты.*

**КУРСИ́В** [*рус.* ⟨*лат.*] *и.* Ҡулдан яҙғанға оҡшатылған баҫма шрифт.

**КУРСО́ВКА** [*рус.*] *и.* Квартирҙа торған көйө санаторийҙа дауаланыу хоҡуғы биргән документ. *Курсовка менән ял итеү.*

**КУ́РТКА** [*рус.*] *и.* Ҡыҫҡа итәкле тышҡы кейем. *Ирҙәр курткаһы. Капрон куртка. Күн куртка. Балалар курткаһы.*

**КУРЫП** [*рус.* короб] *и.* Сана өҫтөнә ултыртыла торған ҙур ситән һауыт. *Күмер курыбы. Курып үреү.*

**КУРЬЁР** [*рус.* ⟨*фр.*] *и.* **1.** Учреждениеның көндәлек йомош-юлына йөрөгән хеҙмәткәр; йомошсо. *Ул .. — ойошманың курьеры, йәғни төрлө ҡағыҙ, конверттар ташып йөрөүсеһе.* С. Агиш.

**2.** Ашығыс рәсми эш менән ебәрелгән кеше. *Курьер аша хәбәр итеү.*

♦ **Дипломатик курьер** сит ил эштәре ведомствоһында эшләгән, дипломатик почта йөрөткән кеше. **Курьер поезы** оҙон юлға йөрөгән етеҙ пассажир поезы.

**КУСТ** [*рус.*] *и.* Бер профилдәге бәләкәй учреждениелар берекмәһе. *Уҡытыусыларҙың методик кусы. Ауыл советтары кусы.*

**КУСТАРСЫЛЫҠ** *и.* **1.** Кустарҙар эше, хеҙмәте.

**2.** *күсм.* Ябай ысул менән, ҡул көсө ярҙамында эшләү алымы. **Кустарсылыҡ сәнғәте** *иҫк.* ябай ысул менән эшләүгә, кустарҙар хеҙмәтенә бәйле сәнғәт. *[Башҡортостанда] кустарсылыҡ сәнғәте үткән быуаттың 50-се йылдарында мөһим бер урынды тота башланы.* „Совет Башҡортостанының ун йылы", 1929.

**КУСТА́РЬ** [1] [*рус.*] *и.* Ябай ысул менән үҙ өйөндә ваҡ-төйәк нәмә эшләгән һөнәрсе.

**КУСТАРЬ** [2] [*рус.* кустарный] *с.* **1.** Кустарь хеҙмәтенә мөнәсәбәтле. *Кустарь промышленность.* / Ябай ысул менән эшләнгән, ҡул көсө ярҙамында ғына башҡарылған. *Кустарь тауарҙар.*

**2.** *күсм.* Бик ябай, һүмалтыр итеп эшләнгән. *Кустарь нәмә.*

**КУФА́ЙКА** [*рус.* фуфайка] *и.* Йылы бәйләм кофта. *Йөн куфайка. Куфайка бәйләү.*

♦ **Куфайка салбар** *диал.* һырыған салбар.

**КУФИ** [*ғәр.*]: **куфи яҙыуы** боронғо ғәрәп яҙыуы.

**КУХА́РКА** [*рус.*] *и.* *кар.* **ашнаҡсы.**

**КУ́ХНЯ** [*рус.* ⟨*нем.*] *и.* **1.** Аш-һыу әҙерләү бүлмәһе; ҡаҙанлыҡ.

**2.** (*йәки* **ялан кухняһы)** Ялан шарттарында аш-һыу әҙерләү өсөн тәғәйенләнгән күсмә мейес.

**КУШЁТКА** *и.* *кар.* **кәнәфи** 1.

**КУШЫҠ** [*фарс.*] *и.* *иҫк.* Ваҡ-төйәк һата торған бәләкәй магазин; киоск.

**КҮБЕГЕҮ** *ҡ.* Күбеклегә әйләнеү, күбекле булыу; күбекләнеү, күпереү. *[Маҡтымһылыу:] Атың ауыҙы күбеккән, татыр ялар малға оҡшай.* «Ҡара юрға».

**КҮБЕГӘН** *и.* *диал.* Бишмәт, һырма.

**КҮБЕК** [1] *и.* **1.** Шыйыҡлыҡтан ҡыуыҡланып-ҡыуыҡланып өрөләп сыҡҡан нәмә; күперек. *Аҡ күбек. Һөт күбеге. Һабын күбеге.* ■ *Урғып-урғып һыуҙар аға, һыу өҫтө күбек кенә* (Халыҡ йырынан).

**2.** Ниҙелер ҡайнатҡанда ҡыуыҡланып-ҡыуыҡланып өҫкә ҡалҡҡан нәмә. *Варенье күбеге. Май күбеге.*

**3.** Ауыҙ-моронндан, тәндән күпереп сыҡҡан шыйыҡлыҡ (тир, шеләгәй). *Ҡара тиргә батҡан күк саптарҙың өҫтөнән күбектәр оса.* Һ. Дәүләтшина. *Ҡотора [Иблис], тулай, зыҡ ҡуба ғифрит кеүек, үкерә, ауыҙынан сәсеп ҡайнар күбек.* Ш. Бабич.

♦ **Аҡ күбеккә батыу** бик ныҡ тирләү (атҡа ҡарата). **Ауыҙыҙан [аҡ] күбек сәсеү** асыу менән ярһып һөйләү. *Полковник Зенченко, был һүҙҙәрҙе ауыҙынан күбектәр сәсеп әйтте.* Д. Юлтый. **Күбек май** ҡатыҡ ҡушып бешкән май.

**КҮБЕК** [2] *и.* *диал.* Күпмәс, сипарат күмәсе.

**КҮБЕКЛЕ** *с.* Күбеге, күперего күп булған, күбек менән ҡапланған. *Күбекле һабын. Күбекле май.*

**КҮБЕКЛӘНДЕРЕҮ** *ҡ.* Күбекле итеү; күпертеү. *Һабынды күбекләндереү. Һөттө күбекләндереү.*

**КҮБЕКЛӘНЕҮ** *ҡ.* **1.** Күбеклегә әйләнеү, күбекле булыу; күпереү. *Ҡаты һыуҙа һабын насар күбекләнә.* ■ *Шифа бөркөп, ҡайнап, күбекләнә алдыр тулы ҡымыҙ алдымда.* С. Кулибай.

**2.** Күбек менән ҡапланыу. *[Ерәнсәйҙең] ыңғырсаҡ, .. ышлыя тейгән ерҙәре, һабынлы һыу һипкән һымаҡ, күбекләнгән.* Т. Килмөхәмәтов.

**КҮБЕКЛӘҮ** *ҡ.* Күбекле итеү; күбекләндереү. *Һыуҙы күбекләү.*

**КҮБЕЛЕҮ** *ҡ.* *төш.* *кар.* **күбеү** [2].

**КҮБЕНДЕРЕҮ** *ҡ.* Һыу йәки дым менән бүртендереү, ҙурайтыу.

**КҮБЕНЕҮ** *ҡ.* **1.** *ҡайт.* *кар.* **күбеү** [1].

**2.** Дым тартып бүртеү. *Һыуҙан сыҡҡас, сыланып һәм күбенеп, китте ҡайыш йомшарып һәм һуҙылып.* М. Өмөтбаев.

**3.** *күсм.* *һөйл.* Асыуҙан бүртенеү.

**КҮБЕНКЕ** *с.* *кар.* **ҡабарынҡы** 1. *Күбенке ирен.*

**КҮБЕРСЕК** *и.* **1.** Тәнгә өрөләп, ҡабарсып сыҡҡан нәмә. *Илшаттың тәне ҡояшҡа ҡып-ҡыҙыл булған, урыны-урыны менән күберсектәр ҡалҡҡан, ә арҡа тиреһе хатта һуйылып төшкән.* В. Ғүмәров.

**2.** *диал.* Тыңҡауыҡ.

**КҮБЕРСЕКЛӘНЕҮ** *ҡ.* *кар.* **күберсеү** 1. *Хәмит трактор менән килә. Уның бите ҡара ҡуңыр булып янған, устары күберсекләнеп ярылған.* А. Игебаев.

**КҮБЕРСЕТЕҮ** *ҡ.* Утҡа, эҫегә яндырып йәки өйкәтеп ҡабартыу. *Аяҡты күберсетеү.* ■ *Арбаны яртылаш тейәгәс, Мөнирә хәл йыйырға туҡтаны. Көрәк һабы уның бармаҡ төптәрен күберсетеп тә өлгөргән ине.* Ш. Янбаев.

**КҮБЕРСЕҮ** *к.* **1.** Өйкәлеү, бешеүҙән һ. б. тән өрөлөп, тире аҫтында һыулы ҡыуыҡсалар барлыҡҡа килеү. *Ирен күберсегән.* ■ *[Сираевтың] бите, утҡа бешеп күрәһең, ҡыҙарып күберсеп сыҡҡан.* Н. Мусин.

**2.** *диал. ҡар.* **күпсеү** 1. *Күберсеп ойоған ҡатыҡ.*

**КҮБЕРӘК** *р.* Күбеһенсә, күп ваҡыт. *[Килгән кеше] күберәк беҙҙең батальон тураһында һөйләште.* Д. Юлтый.

**КҮБЕТЕҮ** *к. йөкм. ҡар.* **күбеү** [2].

**КҮБЕҮ** [1] (күп≠) *к.* Өрөлөп күтәрелеү; ҡабарыу. *Күбеп сығыу.* ■ *[Ҡарт] тултырған тауыҡ һымаҡ күпкән портфелде ҡушкуллап күтәреп алды.* Б. Бикбай.

♦ **Эс күбеү** эс ташыу (ауырыу). *Эс күбеү ас көйө һыулы үлән ашаған малда була.* **Эсең күпкер** ҡарғағанда әйтелә. *Һуҡты ла күпте тиҙ генә, анһат ҡына булғанды теләгән кешегә әйтелә.*

**КҮБЕҮ** [2] *к.* Эсенә йөн, мамыҡ һалып, үтәнән-үтә тегеү; һырыу. *Һырма күбеү. Юрған күбеү.*

**КҮБЕҺЕ** *и.* Кем йәки ниҙеңдер күп өлөшө, күпселеге. *Шағирҙарҙың күбеһенә илһам килә [ҡыҙҙар] һеҙҙең кеүек наҙлы, нәфис бил арҡыры.* Ш. Бабич. *Ялан ғына ерҙең ай бүреһе, күк һыртлан да булыр күбеһе* (Халыҡ йырынан).

**КҮБЕҺЕНСӘ** *р.* Күп осраҡта, күп ваҡыт. *Ер өҫтөнә яҡын ятҡан ҡаҙылмалар хәҙер күбеһенсә асылып бөткән. Шуға күрә яңы хазиналарҙы тәрәндән эҙләргә кәрәк.* Д. Бураҡаев.

**КҮБӘ** [1] *и.* Бер нисә күтәремдән ослап һалынған бесән өйөмө. *Бер күбә бесән. Күбә ебәреү. Күбә тарттырыу. Күбә артын йыйыу. Күбә һалыу.* ■ *Былай эшләһәң, һин, Ғәлим, колхоздың сабылған бесәнен бер аҙнала ҡойоп бөтөрөрһөң,— тине күбә ебәреп торған ағай.* И. Ғиззәтуллин. *Аҡмырҙа дейеүҙең кәүҙәһен тураҡлап, күбәләй итеп өйөп ҡуйған, ти* (Әкиәттән).

**КҮБӘ** [2] *и. иҫк.* Боронғо батырҙарҙың уҡ үтмәҫлек тимер кейеме; ҡояҡ. *[Хәбибә инәй:] Кинйә батырҙың тимер кейеме бынан ун бишегерме йыл элек кенә лә бар ине әле... — Ул кейем — тимер күбә ҡайҙа һуң? — тим мин ҡыҙыҡһынып.* Б. Бикбай.

**КҮБӘЙЕҮ** *к.* Һан йәки күләм яғынан артыу. *Мал күбәйҙе. Халыҡ күбәйҙе.* ■ *Күктә йондоҙҙар һаны күбәйҙе.* С. Агиш. *[Мин улыма] сит илдә дуҫтарыбыҙҙың көндән-көн күбәйеүен үҙемсә ябай итеп аңлатырға тырыштым.* Р. Низамов. ■ *Тауыштар күбәйгәндән күбәйҙе, көсәйгәндән көсәйҙе, бара торғас .. йәрминкә шауына әйләнде.* Д. Юлтый.

**КҮБӘЙТЕЛЕҮ** *к. төш. ҡар.* **күбәйтеү.**

**КҮБӘЙТЕҮ** *к.* Һан йәки күләм яғынан арттырыу, күп итеү. *[Һөнәрсе] көршәккә төшөрөлгән сәскәләр төрөн тағы ла күбәйтә, уларҙы ысын сәскәләргә .. оҡшатырға тырыша.* З. Биишева.

**КҮБӘК** *и. иҫк.* Эт.

♦ **Өй күбәге** бер ергә сыҡмай, гел өйҙә ултырған кешегә әйтелә.

**КҮБӘЛӘГЕС** *и.* Бесән, һалам күбәләй торған машина.

**КҮБӘЛӘК** [1] *и.* **1.** Төҫлө сәскә һеркәһе һымаҡ нәмә менән ҡапланған ҡуш ҡанатлы, елпелдәп осҡан бөжәк. *Аҡ күбәләк. Сыбар күбәләк. Һары күбәләк. Ваҡ күбәләк. Көндөҙгө күбәләк. Төнгө күбәләк. Күбәләк ҡарышлауығы.* ■ *Күбәләктең бар йәме, барлыҡ хаяты гөл менән.* Ш. Бабич. *Апай сәскәләр янында күбәләктәй уйнаған балаларҙан күҙен ала алмай ултыра.* Р. Низамов. *Леп-леп итеп осҡан күбәләктең ҡанат осҡайҙары түңәрәк* (Халыҡ йырынан). *Күбәләктәй күңелем бер ҡуҙғалғас, ҡауышмай ҙа тороп ял алмаҫ* (Халыҡ йырынан). **Гөлйөҙөм күбәләге** ҡарышлауығы емеш ағастарына оялӑй торған көндөҙгө аҡ күбәләк. **Ебәк күбәләге** ҡарышлауығы ебәк бирә торған күбәләк. **Йорт күбәләге** *ҡар:* кесерткән күбәләге. **Кесерткән күбәләге** ҡарышлауығы кесерткән япрағына оялӑй торған ҡара биҙәкле ҡыҙыл күбәләк. **Кәбеҫтә күбәләге** ҡарышлауығы кәбеҫтәгә оялӑй торған көндөҙгө аҡ күбәләк. **Шайтан күбәләге** йөнтәҫ йыуан һоро күбәләк.

**2.** *эйл. ф.* **күбәләгем** Ҡатын-ҡыҙға иркәләп әйтелә. *Һеңлем минең, уңған күбәләгем, һиндә күрәм әсәй йәшлеген.* Р. Ғарипов.

♦ **Күбәләк кеүек** еңел хәрәкәтле ҡыҙҙарға әйтелә. *Танца бөтөү менән Мәрйәм күбәләк кеүек осоп минең эргәмә килеп китте.* Д. Юлтый. **Күбәләк ҡар** эре күҙле йомшаҡ ҡар; ябалаҡ ҡар. *Күбәләк ҡар төшкөләп торған йылымса ғына көн* **ине.** Ә. Вәли. **Күбәләк сәскәләр** сәскәһе күбәләккә оҡшаған ҡуҙаҡлылар (мәҫ. борсаҡ, соя һ. б.).

**КҮБӘЛӘК** [2] *и.* Бер башҡорт ырыуының исеме.

**КҮБӘЛӘК** [3] *и. диал.* Бәләкәй генә түңәрәк күл.

**КҮБӘЛӘКЛӘҮ** *к.* Эре, күҙле булыу (ҡарға ҡарата); ябалаҡлау. *Иртә менән күбәләкләп ҡар яуа, төш ауғас ул ҡар ҡатыш ямғырға әйләнә.* Д. Юлтый.

**КҮБӘЛӘНЕҮ** *к. төш. ҡар.* **күбәләү.** *Бер яҡтан бесән сабыла, икенсе яҡтан йыйыла, өсөнсө яҡтан күбәләнә, кәбәндәр ҡойола. Эш ҡайнай.* Ғ. Дәүләтшин.

**КҮБӘЛӘТЕҮ** *к. йөкм. ҡар.* **күбәләү.**

**КҮБӘЛӘҮ** *к.* Күбә итеп өйөү, күбәгә һалыу. *Төшкө аштан һуң елкәләренә һәнәк, тырма һалған ауылдаштар бесән күбәләргә китте.* Я. Хамматов.

**КҮБӘЛӘШЕҮ** *к. урт. ярҙамл. ҡар.* **күбәләү.** *Бесән күбәләшеү.*

**КҮБӘТӘ** *и. диал.* Сеүәтә. *Бер күбәтә ҡымыҙ.*

**КҮБӘҮ** *с. диал. ҡар.* **күп** 2. *Күбәү кеше.*

**КҮБӘҮЛӘШЕҮ** *к.* Күп булып бергә йыйылыу; күмәкләшеү. *Бүреләр күбәүләшеп йөрөй.*

**КҮГЕЛ** *и. диал.* Сүсбәрә.

**КҮГЕЛЙЕМ** *с.* Күк төҫкә тартым; күкшел. *Күгелйем йәшел. Күгелйем зәңгәр.* ■ *Өйҙөң эсе күгелйем аҡ буяуға, иҙәндәре һары буяуға буялған.* Ғ. Дәүләтшин. *Күгелйем төтөндәрен һауаға бөркә-бөркә усаҡ яна.* М. Тажи.

**КҮГЕЛЙЕМЛӘНЕҮ** *к.* Күгелйем төҫкә инеү. *Көнсығыш яғы күгелйемләнеп яҡтыра башланы.* С. Ҡудаш.

**КҮГЕМҺЕРӘҮ** *к. ҡар.* **күгелйемләнеү.** *Көмбәҙләнеп, күгемһерәп ятҡан Һарайса тауы әле һаман күҙ алдымда тора.* Ғ. Ибраһим-Ҡыпсаҡ.

**КҮГӘ** [1] *и.* Эйәр ҡаштарын беркеткән яҫы ҡайыш.

**КҮГӘ** [2] *с.* Йәш (ағасҡа ҡарата). *Күгә йүкә. Күгә имән.*

**КҮГӘЛ** *и. шул уҡ* **күгәл өйрәк** (*ҡар.* **өйрәк** 1). *Күп тә үтмәҫтән тағы бер инә өйрәк менән бер күгәл килеп төштө.* Х. Мохтар.

**КҮГӘЛДЕ** *и. диал.* Күгәл.

**КҮГӘМӘ** *и.* Баҫаның эшкәртелгән иң яҡшы сүсе.

**КҮГӘН** [1] *и.* **1.** Ишек, ҡапҡа кеүек асмалы нәмәнең арт яғын ҡуҙғалырлыҡ итеп беркетеп торған тимер. *Ҡапҡа күгәне. Тәҙрә күгәне. Һандыҡ күгәне.* ■ *Ишек өҫкө күгәненән һурылып сығып, салшайып аҫылынып тора.* Б. Бикбай.

**2.** Йоҙаҡ элеп йоҙаҡлай торған атлама тимер; келә. *Амбар .. ишегенең ҡалын күгәненә аҫылған йоҙаҡ шылтырай башланы.* Ғ. Хәйри.

**КҮГӘН** [2] *и.* **1.** Ваҡ ҡына күкһел ҡара емешле, энәле ағаслыҡ. *Күгән ҡыуағы. Күгән сыбығы.*

**2.** Шул ағастың емеше. *Күгән вареньеһы.*

**КҮГӘНЛӘҮ** *к.* Күгән [1] (1 мәғ.) ҡуйыу.

**КҮГӘНӘК** *и. диал.* Келә.

**КҮГӘРЕК** *и. диал.* Үңәҙ, күк.

**КҮГӘРЕНЕҮ** *к.* Ҡобара осоп, күк төҫкә инеү (кешегә ҡарата); буҙарыу. *Өшөп, күгәренеп китеү.* ■ *Зилскийҙең йөҙө һулыны. Бер ағарынды, бер күгәренде.* Г. Дәүләтшин.

**КҮГӘРЕҮ** *к.* **1.** Күк төҫкә инеү. *Күгәрсендәй күгәрҙе инде өҫтөмдәге күлдәгем* (Халыҡ йырынан).

**2.** Күкһел, зәңгәр төҫтә булыу. *Күгәреп күренеү.* ■ *Ҡола ат туп-тура күгәреп ятҡан Ирәндек яғына .. китте.* С. Кулибай.

**3.** Үҙ төҫөн юғалтып, төҫһеҙләнеү; буҙарыу. *[Ҡыҙҙар] һыуыҡ балсыҡҡа өшөп, күгәреп бөткән аяҡ, ҡул, биттәрен йыуа башланы.* Һ. Дәүләтшина. / Ҡан һауып, күк төҫкә инеү. *Күгәреп сығыу. Тән күгәреү.*

**4.** Еүешкә боҙолоп күк алыу. *Күгәргән икмәк. Күгәргән он. Баҫма таҡталары күгәреп, бәҫәреп бөткән.*

**5.** Йәшел төҫкә инеү (үсемлеккә ҡарата).

♦ **Күҙ күгәреү** *ҡар.* **күҙ.**

● *Ямғыр күп яуһа, ер күгәрә, ҡарғыш күп алһа, ир күгәрә.* Мәҡәл.

**КҮГӘРЕШЕҮ** *к. урт. ҡар.* **күгәреү.**

**КҮГӘРСЕН** *и.* **1.** Күберәк күкшел, күк йәки аҡ төҫтәге ҙур бөрләтәүле гөрләй торған ҡош. *Аҡ күгәрсен. Бүрекле күгәрсен. Ҡыр күгәрсене.* ■ *Күк күгәрсен тигән ҡошҡайҙың аяҡтары ҡыҙыл, үҙе күк* (Халыҡ йырынан). **Ала күгәрсен** *ҡар.* **алатуба. Мысыр күгәрсене** Урта Азияла йәшәгән ваҡ күгәрсен төрө.

**2.** *эйл. ф.* **күгәрсенем** иркәлән әйтелә. *[Новиков:] Күгәрсендәрем, ниндәй матур аҙалар бит.* Д. Юлтый.

♦ **Күгәрсен күҙе** ҡыҙыл күҙле ваҡ ҡына зәңгәр сәскә. *Шаулап яуҙы ямғыр. Күгәрсен күҙе күгәртте оҡобым тирә-яғын.* М. Кәрим. **Күгәрсен күҙендәй** эре, таҙа ашлыҡҡа әйтелә. **Күгәрсен күҙе һымаҡтар ғаиләһе** ике өлөшлө үсемлектәр ғаиләһе (күгәрсен күҙе, этколаҡ һ. б.). **Күгәрсен һөтө** *ҡар.* **һөт. Пар күгәрсендәй** (*йәки* **күгәрсен кеүек**) татыу ғаиләгә әйтелә. **Тыныслыҡ күгәрсене** тыныслыҡ билгеһе итеп ҡабул ителгән аҡ күгәрсен һүрәте.

**КҮГӘРТЕҮ** *к.* **1.** Күк төҫкә индереү. *Шаулап яуҙы ямғыр. Күгәрсен күҙе күгәртте оҡобым тирә-яғын.* М. Кәрим.

**2.** Бәреп, һуғып күк итеү (тәнде). *Күгәрткәнсе һуғыу.*

**3.** Еүеш, дым тейҙереп күк алдырыу. *Икмәкте күгәртеү.*

**КҮГӘҮЕН** *и.* Инәһе кеше һәм хайуандар ҡаны менән туҡлана торған ялтыр ҙур күҙле, ике ҡанатлы себен һымағыраҡ бөжәк. *Ваҡ күгәүен. Эре күгәүен. Ҡара күгәүен.* ■ *Көндөң эҫеһендә мең төрлө себен, бөгәләк, күгәүен, серкәйҙәр быҙылдаша.* Ғ. Дәүләтшин. **Ат күгәүене** эре ҡара күгәүен.

♦ **Күҙен алған күгәүендәй** бер нигә иғтибар итмәй һөмһөҙләнеп ҡайҙалыр үтергә, инергә тырышҡан кешегә әйтелә.

**КҮҘ** *и.* **1.** Күреү, ҡарау ағзаһы. *Ҙур күҙ. Ҡылый күҙ. Таһыр күҙ. Һуҡыр күҙ. Шешмәк күҙ. Зәңгәр күҙ. Ҡара күҙ. Күҙ дарыуы. Күҙ ҡарашы. Күҙ ҡабағы. Күҙҙе ҙур асыу. Күҙгә йоҡо килеү. Күҙгә йәш тулыу. Күҙгә ҡан һауыу. Күҙ йылтырау. Күҙ яныу. Күҙ сағылйыу.* ■ *Зөләйхә, һин ерҙә йөрөгән хур ҡыҙы, күҙҙәреңдә яна күктең йондоҙо.* Салауат Юлаев. **Ҡуҙы** (*йәки* **ҡуй**) **күҙ** ҙур һоро күҙгә ҡарата. *Оҙон ғына буйлы, аҡ сырайлы, ҡара ғына ҡашлы, ҡуй күҙле* (Халыҡ йырынан). **Таш күҙ** мәғәнәһеҙ ҡарашлы ҙур күҙгә ҡарата. **Тоҙ күҙ** мәғәнәһеҙ, төҫһөҙ күҙгә ҡарата. **Төлкө күҙ** ҡыйығыраҡ булып торған күҙгә ҡарата әйтелә. **Күҙҙең ағы** күҙ алмаһының аҡ өлөшө. **Күҙ алмаһы** күҙҙең бөтә тумалағы. **Күҙ бәбәге** 1) күҙ ҡабағының керпек үҫкән сите; 2) *диал. ҡар.* **кешелек** [2]. **Күҙ кешелеге** (*йәки* **кешеһе**) *ҡар.* **кешелек** [2]. **Күҙ ҡараһы** *ҡар.* **кешелек** [2]. **Күҙ ҡойроғо** (*йәки* **сите**) күҙҙең сикә яҡ осо. **Күҙ майы** күҙ алмаһын уратып алған май ҡатламы. **Күҙ мороно** күҙҙең танау яҡ осо; күҙ төбө. **Күҙ төбө** 1) *ҡар.* **күҙ мороно;** 2) аҫҡы ҡабаҡтың түбәнге өлөшө. *Күҙ төбө күгәргән.* **Күҙ тумалағы** *ҡар.* **күҙ алмаһы. Күҙ яҫмығы** күҙҙең ҡараһы эсендәге бәләкәй генә линза һымаҡ нәмә (күҙгә төшкән һүрәт шуның аша үтә). / Кемгә йәки нимәгәлер йүнәлтелгән ҡараш. *Күҙҙе [ситкә] алыу. Күҙ менән оҙатып ҡалыу. Күҙен алмай ҡарау.* / Ҡараштың сағылышы. *Көнсөл күҙ. Оятһыҙ күҙ.* / Ҡараштың йәшерен тәьҫир көсө. *Яҡшы күҙ, беләм таш иретә, ағас ҡорота күҙҙең яманы.* М. Кәрим.

**2.** Күреү һәләте. *Күҙ бөтөү. Күҙ насарайыу. Күҙҙән яҙыу.* ■ *[Өйрәнсек — Һөнәрсегә:] Көнтөн күҙ бөтөрөп, үҙеңдең ҡараңғы өйөңдә төңкәлеп ултыраһың.* З. Биишева. **Күҙҙең ҡоросо** күҙҙең үткерлеге, көсө. **Күҙ(ҙең) ҡоросо ҡайтыу** күҙ насарланыу, насар күрә башлау.

**3.** Ҡарау, күҙәтеү өсөн махсус эшләнгән тишек. *Мартен мейесенең күҙе. Төрмә ишегенең күҙе. Фотоаппараттың күҙе.*

**4.** Мәрйен-муйынсаҡтың еп үткәрә торған тишеге; күҙәү. *Ҙур күҙле мәрйен. Муйынсаҡ күҙе. Энә күҙе.*

**5.** Бәйләм бәйләгәндә яһалған элмәк. *Күҙе китте. Күҙе төштө.* ■ *Ғәйникамал инәй ҡулына бәйләмен алып, бер-ике генә күҙ бәйләне лә эшен ситкә ҡуйҙы.* Я. Вәлиев. / Шөйтө элмәге.

*Күҙ ебәреү. Күҙ ыҫҡындырыу.* ■ *Бөгөн ике генә күҙ һуҡтым.*

**6.** Картуфтағы бөрө урыны. *Картуфтың күҙен алып ултыртыу.* / Сәскәнең уртаһындағы һеркәлек. *Һары күҙле аҡ сәскә.* ■ *Яҙ гөлдәре күҙҙәрен астылар, хуш еҫ менән тулды болондар.* С. Ҡудаш.

**7.** *кар.* **күҙгәнәк** 1. *Ваҡ ҡына тәҙрә күҙҙәренең ҡайныһы ҡырҡ ҡорау быяланан, ҡайныһы ҡарындыҡтан бөткән.* Ғ. Дәүләтшин.

**8.** *диал. кар.* **күҙәнәк** 3. *Балауыҙ күҙе.*

**9.** Ҡар бөртөгө, ямғыр тамсыһы. *Ҡар күҙе. Ямғыр күҙе. Ваҡ күҙле ямғыр. Эре күҙле ҡар.* ■ *Көҙгө бысраҡтар башланды. Көн дә тиерлек ямғыр яуа, ҡар күҙҙәре лә төшкөләй.* Н. Мусин.

◆ **Ас күҙ** туйына алмаған ҡомһоҙ, ҡәнәғәтһеҙ кешегә ҡарата әйтелә. **Ғәләм күҙе** күк көмбәҙе. **Дүрт күҙ менән көтөү** бик ныҡ түҙемһеҙләнеп көтөү. *Беләм һинең өҙөлөп һағынғаның, дүрт күҙ менән мине көткәнең.* Ғ. Амантай. **[Ике] күҙ дүрт булыу** ныҡ ғәжәпләнеү, бик аптырау. *Ғинди ҡаланан ҡайтҡанда ауыл ҡыҙҙарының күҙе дүрт була торғайны.* Д. Юлтый. **[Ике] күҙҙе дүрт итеү** бик ныҡ ғәжәпләндереү, аптыратыу. *Йәнәһе.., көтмәгәндә генә ҡайтып, уның күҙен дүрт итәм.* Н. Мусин. **[Ике] күҙҙе май ҡаплау** (*йәки* **баҫыу**) уны-быны күрмәҫ, белмәҫ булыу. *Ике күҙен май ҡаплап, ете ҡат ер аҫтындағы һуҡыр сысҡан һымаҡ, тирә-әйләнәһендә ни барын белмәҫ булған.* М. Тажи. **[Ике] күҙен баҡтырып [әйтеү]** туранан-тура, йәшереп тормай, кешенең үҙенә әйтеү (ғәҙәттә шелтәләү, ғәйепләү һүҙҙәренә ҡарата). **Ике күҙе ут [кеүек]** күҙҙәре балҡып, янып торған кешегә әйтелә. **Икенсе күҙ менән ҡарау** кем йәки нимәгәлер ҡарата уй-фекер, ҡараш үҙгәреү, мөнәсәбәт икенселәнеү. *Донъяға икенсе күҙ менән ҡарау.* ■ *Сашаға малайҙар бөтөнләй икенсе күҙ менән ҡарай башланылар.* Ә. Бикчәнтәев. **Йылы күҙҙә** *кар.* **йылы. Күҙҙең ағын әйләндереп** (*йәки* **еңдереп) ҡарау** яман асыу менән ҡарау. **Күҙ алды ҡараңғыланыу** (*йәки* **томаланыу**) ҡапыл баш иҫәңгерәп, күрмәҫ булыу. *Хатты уҡып сыҡҡас, Мәйсәрә[нең] .. күҙ алдары ҡараңғыланып китте.* С. Кулибай. **Күҙ алдына килтереү** (*йәки* **баҫтырыу**) 1) хәтерҙә уятып, һүрәтләндереү. *[Айбулат] төпһөҙ тәрән .. ғәжәп өлкән һыу байлығын бер нисек тә күҙ алдына тулы итеп килтерә алмай.* Һ. Дәүләтшина; 2) башҡа килтереү, уйлау. *Күҙ алдына килтерә алмаҫлыҡ хәл.* ■ *Мин .. аҡкоштарҙың юл таба белеүҙәрен күҙ алдына килтерҙем.* С. Кулибай. **Күҙ алдына килеү** (*йәки* **баҫыу**) хәтергә, уйға килеп һүрәтләнеү. *Уҡытыусының күҙ алдына ҡәҙерле уҡыусылары килеп баҫа.* „Совет Башҡортостаны", 1964, 23 ғинуар. **Күҙ алдынан китмәү** иҫтән, хәтерҙән сыҡмау. *Онотолһа ла әйткән һүҙҙәрең, күҙ алдымдан китмәҫ күҙҙәрең.* Р. Ғарипов. **Күҙ алдында** 1) ҡаршыла, эргәлә. *Ир бала .. бөгөн күҙ алдында, иртәгә әллә ҡайҙа.* Һ. Дәүләтшина; 2) кешенең үҙе алдында. *Күҙ алдында арттырып һөйләү. Күҙ алдында хурлау*; 3) хәтерҙә, иҫтә. *Күҙ алдында тороу. Күҙ алдында тотоу.* ■ *Әлдә онотолмаған ул хистәрем, күҙ алдымда һаман күргәндәр.* Ғ. Сәләм; 4) ҡарап торғанда, бик тиҙ. *[Хәйруллиндың] төрөпкәһе күҙ алдында сыйырсыҡҡа әйләнә лә форточка аша осоп сығып юғала.* С. Агиш. **Күҙ алмашыныу** (*йәки* **алышыныу**) яҡтынан ингәс, күрмәй тороу. *Яҙ өйгә инеү менән күҙ алмашына.* **Күҙ алымы** *шул уҡ* **күҙ күреме** (*кар.* **күрем** [2]). *Күҙ алымы ерҙән күренеп ята Урал тауҙарының күк ташы* (Халыҡ йырынан). **Күҙ артында** кеше үҙе булмағанда, үҙе юҡта. **Күҙ асҡыһыҙ** бик көслө (буран, төтөнгә һ. б. ҡарата]. *Күҙ асҡыһыҙ ҡара төтөн.* ■ *Күҙ асҡыһыҙ ҡаты ҡышҡы буран бүре кеүек олоп ҡотора.* Ш. Бикҡолов. **Күҙ асылыу** 1) еңеллек һиҙеү, тән еңеләйеү. *Һалҡын һыу менән бик шәп [итеп].. йыуындым. Күҙ асылды. Бөтөнләй хәл инеп китте.* С. Агиш; 2) уҡый-яҙырға өйрәнеү. *Хәреф танып, күҙ асылғас та, бөтә ергә уны [Баһауҙы] еккәндәр.* Ғ. Амантай; 3) аң кимәле күтәрелеү, ниҙең ни икәнен төшөнөрлөк булыу. *Ҡараңғылыҡта иҙелеп йәшәгән башҡорт халҡының .. күҙе асылыуға теүәл илле йыл тулды.* «Башҡортостан ҡыҙы», 1969, № 3. **Күҙ асып йомғансы** бик тиҙ, тиҙ арала. *Йортто ут тотош ялмап та ала, күҙ асып йомғансы бер ус көл генә ҡала.* Б. Бикбай. **Күҙ атыу** 1) ҡарау, ҡараш ташлау. *Алыҫтарға күҙ атһаң, ҡатлаулы-ҡатлаулы бейек Урал тауҙары күренә.* Ғ. Минһажев; 2) иғтибар итеү, күңел биреп ҡарау. *[Ҡәнзәфәр] күптән бирле инде Әлимәгә күҙ атып, күңел һалып йөрөй.* Д. Юлтый. **Күҙ бағыу** өмөт бағлау. *Күҙ бағып торған балам.* **Күҙ буяу** насарлыҡты йәшереп, тыштан яҡшы күрһәтеү. *Рәте булмаҫ төҫлө был комиссиял арҙың: һүҙе күп, һөҙөмтәһе юҡ. Бары күҙ буяуға оҡшай был һөйләнеүҙәр.* Ғ. Хөсәйенов. **Күҙ быуыу** зиһенде томалап, кешенең ихтыярына тәьҫир итеү. *Алдашаһың.., сихырлайһың.., күҙ быуаһың һин! — тиҙәр.* Ғ. Мәсғүт. **Күҙ бәйләнеү** ҡараңғы төшөү. *Күҙ бәйләнә башланы. Тау башындағы йорттарҙы бер-береһенән асыҡ айырып булмай.* Ж. Кейекбаев. **Күҙ бәйләү** *кар.* **күҙ быуыу. Күҙгә аҡ-ҡара күренмәү** ниндәйҙер тойғо-кисерешкә артыҡ бирелеүҙән бер ни күрмәү, иғтибарһыҙға әйләнеү. *Ғариф староста ҡурҡыуҙан ҡойолоп төштө. Ул бик ҡабаланып кейенде лә, күҙенә аҡ-ҡара күренмәй, тышҡа сығып китте.* Ж. Кейекбаев. *Буласаҡ ҡыҙыҡ осрашыуҙы уйлағанлыҡтан уның [Мирандың] күҙенә аҡ-ҡара күренмәне.* М. Садыкова. **Күҙгә бәрелеү** (*йәки* **ташланыу**) айырым-асыҡ булып күренеү (төрлө нәмәгә ҡарата). *Ауыл ерендә шул инде: ситтән килгән кеше бойҙай араһындағы һоло һымаҡ күҙгә бәрелеп кенә тора.* М. Тажи. **Күҙгә йоҡо төйөлөү** йоҡо баҫыу. **Күҙгә көрпә осороу** *диал. кар.* **күҙ буяу. Күҙгә күренеү** *кар.* **күренеү. Күҙгә [тура] ҡарап** 1) кешенең үҙе алдында, туранан-тура [әйтеү]; 2) оялып-тартынып тормай; күҙен дә йоммай. *Күҙгә ҡарап алдау.* **Күҙгә ҡарап ҡалыу** *кар.* **ҡарау. Күҙгә ҡарап тороу** *кар.* **ҡарау. Күҙгә ҡырып һалырлыҡ** бик аҙ, саҡ ҡына. *Байҙан күҙгә ҡырып һалырлыҡ та ярҙам көтөргә ярамай.* Т. Хәйбуллин. **Күҙгә наҡыҫ** (*йәки* **нәҙек) булыу** насар күреү. **Күҙгә салыныу** яҙа-йоҙа ғына, аҙ генә күренеү, күренеп ҡалыу. *Будкаға етер-етмәҫтән күҙемә аҡ нәмә салынып ҡалды.* З. Хис-

мәтуллин. *Ҡыҙ егеттең күҙенә салыныу өмөтө менән соҡорҙоң икенсе яғына сыкты.* Ф. Иҫәнғолов. **Күҙгә сүп һалыу** *кар.* **сүп** [1]. **Күҙгә төртһәң күреммәҫлек ҡараңғы** бик ныҡ ҡараңғы. **Күҙгә элеү** иғтибарға алыу. *[Зәлифә:] Сей ауыҙ малайҙарҙы мин күҙгә элмәйем, егеткә лә һанамайым.* Һ. Дәүләтшина. **Күҙгә эләгеү** күренеп ҡалыу. **Күҙҙе ала алмау** бик ныҡ һоҡланғанда әйтелә. *Улар һоҡланып, Волганан күҙен ала алмай.* Ғ. Әмири. **Күҙҙе алдау** *һөйл.* серем итеү. *[Сабира апай] бик тә йоҡо баҫып барғас, саҡ ҡына күҙемде алдап алайым тип, урынға барып ятты.* Ә. Вахитов. **Күҙҙе астырмау** *йәки* **күҙен дә астырмау** оялтып, бәйләнеп, тынғы бирмәү. *[Гөлбәзирә:] Тышка сыкһам, ниңә улыңды һимертеп яткырмайһың, эшкә ҡыумайһың, тип күҙҙе лә астырмайҙар.* Р. Ниғмәти. *[Садыйк Нуруллаҳың] төртмә һүҙҙәр менән күҙен дә астырмай.* Ш. Янбаев. **Күҙҙе асыу** 1) аң-белемгә эйә булыу. *[Бәгиҙә:] Ҡәйнәм делегатка ине. Ул, күҙеңде асҡың килһә, ликбезга йөрө, йыйылыштан калма, тип өйрәтте.* И. Ғиззәтуллин; 2) низең ни икәнен төшөнөү, аңларға өйрәнеү. *[Ләлә:] Ҡайғы күҙемде асты — бәхет байлыкта ғына түгел икән, уҙ кулыңда.* Б. Бикбай. **Күҙҙе ҡан баҫыу** (*йәки* **алыу**) асыу йәки ҡомар менән ярһыу, шашыу. *Һунар ҡомары менән күҙҙәрен ҡан баҫҡан эт .. алға ынтыла.* Д. Юлтый. *Таш йөрәкле рәхимһеҙ байҙарҙың аҡайған күҙҙәрен ҡан алды. Уларҙың .. йөҙҙәренә йыртҡыслыҡ билдәһе сыкты.* Ш. Шәһәр. **Күҙҙе ҡыҙҙырыу** һоҡландырып, үҙенә йәлеп итеү; ҡыҙыҡтырыу. *Һылыу ҡыҙҙай биҙәнеп, дошман күҙен ҡыҙҙырып, яу астырған Уралым* (Ҡобайырҙан). **Күҙ(ҙең) яуын алыу** бик матур, сағыу булыу. *Күҙҙең яуын алалар аҡ, һары, ал сәскәләр.* Салауат Юлаев. **Күҙҙе тултырып ҡарау** ныҡ иғтибар, хис менән ҡарау. **Күҙҙе тырнап асыу** йоҡонан тора һалыу (торғас та бер нәмә эшләй башлағанда әйтелә). *Күҙен тырнап асып килеп тә еткән.* **Күҙ ҙә ҡаш [булып] көтөү** *кар.* **дүрт күҙ менән көтөү. Күҙҙән кисереү** ҡарау, ҡарап сығыу. *Һүҙ өндәште уға [ҡатынға] архитектор баштан-аяҡ күҙҙән кисереп.* Ғ. Сәләм. **Күҙ(ҙән) осормау** кем йәки нимәнелер күҙәтә алыу, эргәнән ситкә ебәрмәй күреп тороу. *Баланан күҙ осормай ҡарап тороу.* **Күҙҙән тайыу** күренмәҫ булыу, юғалыу. **Күҙҙән тайҙырыу** *кар.* **күҙҙән ыҫҡындырыу. Күҙҙән тайышыу** кемдеңдер янынан ситкә китеп күренмәҫкә тырышыу. **Күҙҙән төшөү** берәй кеше йәки халыҡ алдында абруй бөтөү. *Уразлин Нуркиндың күҙҙән төшөүен көтөп кенә йөрөй, уңайы тура килгәндә уның эшенә аяҡ салыуҙан да баш тартмаҫ ине.* Ғ. Ғүмәр. **Күҙҙән уҙғарыу** (*йәки* **үткәреү**) барлау, тикшереү ниәтендә бөтәһен дә ҡарап сығыу. *Ҡыҙ һәр кешене күҙҙән үткәрә, иллә мәгәр Ҡамыр батыр юҡ та юҡ, ти* (Әкиәттән). **Күҙҙән ыҫҡындырыу** кем йәки нимәнелер күрмәй башлау, күҙәтә алмау. *Күҙҙән ыҫҡындырмай ҡарап тороу.* **Күҙҙән ыҫҡыныу** 1) эргәнән, яндан ситкә китеп күренмәй башлау; 2) иғтибарҙан ситтә ҡалыу. *Мурзиндың .. ҡыланышы берәһе лә Юлияның күҙенән ыҫҡынманы.* Һ. Дәүләтшина. **Күҙҙән юғалыу** юҡ булыу, күренмәҫ булыу. **Күҙҙә тотоу** *кар.* **күҙ уңында тотоу. Күҙе ҡаты** халыҡ ырымынса, ҡарашы зыян килтергән кешегә ҡарата әйтелә. **Күҙе лә йөҙө** берәй кешене үҙе алдында һөйләгәндә әйтелә. **Күҙе менән** *һөйл. кар.* **күҙенән. Күҙемә күренмә** *йәки* **күҙемдән юғал** асыуланып ҡыуғанда әйтелә. **Күҙен дә йоммай** оялып-тартынып тормай (әйтеү, һөйләү). *Күҙен дә йоммай алдай.* **Күҙен сығарғансы әйтеү** тураһын бәреп әйтеү. **Күҙен тондороп** (*йәки* **тондора ла**) һис нигә иғтибар итмәй, аҡ-ҡараны күрмәй. **Күҙеңдән кинән** (*йәки* **һөйөн**) рәхмәт белдергәндә әйтелә. **Күҙең сыҡҡанмы** (*йәки* **юҡмы**) бәрелеп-һуғылып, абайламай йөрөгән кешегә әрләп әйтелә. **Күҙең сыҡҡыр** ныҡ ҡарғағанда әйтелә. **Күҙе осло** *кар.* **осло күҙ. Күҙ етеү** 1) яҡшы күреү, күрә алыу. *[Бабай:] Күҙ етеңкерәмәй шул хәҙер, .. йыуан энәне лә һабаҡлап булмай башланы.* Ә. Вахитов; 2) ҡарап күрә алыу (алыҫ ятҡан нәмәләргә ҡарата). *Күҙ еткән ер. Күҙ етмәҫ дала.* **Күҙе тоноп** (*йәки* **сығып, ташып**) ниндәйҙер эшкә, тойғоға артыҡ бирелеүҙән бер нигә иғтибар итмәй, бер ни күрмәй. **Күҙ йомоу** берәй етешһеҙлеккә әһәмиәт бирмәү, иғтибар итмәү. *[Фариза] Имайҙың бөтә яман ҡылыҡтарына күҙ йомоп, баш әйеүҙән башҡаны белмәй ине.* Һ. Дәүләтшина. **Күҙ йөрөтөү** (*йәки* **йүгертеү**) тиҙ генә байҡап ҡарап алыу, тиҙ генә барыһын да ҡарап сығыу. **Күҙ йәше кеүек** бик таҙа, саф (һыу һымаҡ шыйыҡлыҡҡа ҡарата). *Күҙ йәше кеүек саф һыу.* **Күҙ йәше менән** илай-илай. *Күҙ йәше менән инәлеү.* **Күҙ йәшереү** кемгәлер күренмәҫкә тырышыу, ҡасып йөрөү. **Күҙ көйөгө** *кар.* **көйөк. Күҙ күгәреү** көтөп, аптырап бөтөү. *Кисәнән бире көтә-көтә күҙҙәр күгәрҙе.* Ә. Мирзаһитов. **Күҙ күргән** аралашып йөрөгән, белгән, таныш. *Хәмит бисәһе күҙ күргән, һүҙ әйткән кешеләрен ҡунаҡҡа йыйған.* Б. Бикбай. **Күҙ күреме** *кар.* **күрем** [2]. **Күҙ күрмәгән, ҡолаҡ ишетмәгән** 1) ғәжәпләнерлек нәмәгә ҡарата әйтелә. *Күҙ күрмәгән, ҡолаҡ ишетмәгән хәл;* 2) таныш булмаған, билдәһеҙ. *Күҙ күрмәгән, ҡолаҡ ишетмәгән яҡҡа кейәүгә китеү.* **Күҙ кәртәһе** халыҡ ырымынса, күҙҙе хәүеф-хәтәрҙән һаҡлаған сихри көс. **Күҙ ҡабағын төйөү** сырайға асыу билдәһе сығарыу. **Күҙ ҡарайыу** *кар.* **ҡарайыу. Күҙ ҡараһы кеүек** (*йәки* **ҡараһындай**) *кар.* **ҡара** [1]. **Күҙ(енең) ҡойроғо** (*йәки* **сите, ҡырыйы**) **менән ҡарау** 1) башты бормай, һиҙҙермәй генә ҡарау. *Ҡыҙ егеткә күҙенең ҡырыйы менән генә ҡарап ала* (Әкиәттән); 2) ризаһыҙлыҡты, хуп күрмәгәнде белдереү (мәҫ. кемдеңдер килеүенә ҡарата). **Күҙ ҡорто** *диал.* һоҡландырған, алыу теләген уятҡан нәмә. *Батмустың әйләнәһен ҡалас, май, йомортҡа, лампасый кеүек бисәләрҙең күҙ ҡорто булған нәмәләр әйләндереп алған.* Ғ. Дәүләтшин. **Күҙ ҡыҙыу** (*йәки* **ҡыйыу**) нимәгәлер һоҡланып там итеү; ҡыҙығыу. *Шундай шәп баҡсаға, ҡалып ҙурлыҡ ҡыярҙарға кемдең күҙе ҡыҙмаһын.* А. Ғирфанов. **Күҙ ҡыҫыу** *кемгә* һыңар күҙҙе ҡапыл йомоп алып, ишара яһау. *Ҡатын асыҡ итеп йылмайҙы, миңә белдермәҫкә теләп, иренә .. күҙ ҡыҫты.* С. Агиш. **Күҙ майы бөтөү** күҙ төпкә батып нурһыҙланыу. **Күҙе маңлайына менгән** *кар.* **маңлай. Күҙ менән ҡаш араһында** ҡарап торғанда, ҡапыл ғына. *Күҙ менән ҡаш араһында*

*юк булыу.* ■ *Мәсем хандың ҡыҙы күҙ менән ҡаш араһында гәйеп булды.* «Аҡбуҙат». **Күҙ нуры** 1) күреү һәләте. *Күҙҙең нурын бөтөрөү.* ■ *Күҙ йәше күҙҙең нурын ҡырҡа.* Я. Хамматов; 2) ҡараштағы йылылыҡ, яҡтылыҡ. **Күҙ нурым** иркәләгәндә әйтелә. *Күҙ нурым, бәпкәм, гүҙәл сәскәм, йөрәгем парсаһы.* Д. Юлтый. **Күҙ нурындай** (*йәки* **кеүек**) бик ҡәҙерле, ғәзиз. *Күҙ нурындай һаҡлау.* ■ *Урал тигән ере бар, күҙ нурындай иле бар батыр башын әйерме?* (Ҡобайырҙан). **Күҙ нурын түгеү** бик ентекләп тырышып ҡарау. **Күҙ нәҙегәйеү** насар күрә башлау. **Күҙ өйрәнеү** оҙаҡ ваҡыт ҡарап, күреп йөрөп күнегеү. *Өйрәнгән күҙгә генә Мырҙаш артыҡ ят күренмәй. Күрмәгән кешеләр Мырҙашты беренсе күргәндә йөҙөнә имәнеп ҡарап тора.* Д. Юлтый. **Күҙ өҫтөндәге ҡаш кеүек** *ҡар.* **ҡаш** [1]. **Күҙ сығыу** берәй эш менән күп шөғөлләнеп, оҫтарып бөтөү.— *Һин инде, иптәш Хәмитов, мине өйрәтмә! Боронголар әйтмешләй, сауҙа эшендә минең күҙем сыҡҡан.* С. Агиш. **Күҙ ташлау** ҡапыл ҡарап алыу. **Күҙ тейҙереү** 1) халыҡ ырымынса, күҙ ҡарашы менән берәй төрлө зыян килтереү, сирләтеү; 2) *шаяр.* кешене, берәй нәмәне артык маҡтап боҙоу. **Күҙ тейеү** 1) халыҡ ырымынса, кешенең ҡарашынан ауырыу йәки берәй төрлө зарар күреү. *Күҙ тейеү күҙҙән түгел, күңелдән ҡаралығынан;* 2) *шаяр.* кешене, берәй нәмәне артыҡ маҡтап боҙоу; маҡтағандан боҙолоу. *Маладис ир ул беҙҙең Фәхри. Тик артыҡ маҡтап, күҙ тейеп ҡуймаһын.* Б. Бикбай. **Күҙ теймәһен** кемгә йәки нимәгәлер асыҡтан-асыҡ һоҡланғанда әйтелә. *Ҡыҙың ҡалай матур, күҙ теймәһен.* **Күҙ текләштереү** *ҡар.* **күҙләштереү. Күҙ текәү** 1) ҡарашты бер нәмәгә йүнәлтеү. *Алыҫ тауҙарға күҙ текәү*; 2) өмөт бәйләү, ышаныу. *Улына күҙ текәп ҡалды.* **Күҙ терәге** *ҡар.* **терәк. Күҙ терәү** өмөт бағлау, ышаныу. *Күптәр күҙ терәп торған малдарын һатты.* Ғ. Хәйри. **Күҙ тоҙ(ҙай) булыу** һоҡланыу, ҡыҙығыу, аптырауҙан күҙ ялтырау, яныу. *Әй, Хәсбикәй, тумалаҡ, йыуан аяҡ, бына ашлыҡ үкереп үҫеп китһә, һинең матур күҙҙәр тоҙ булыр.* Б. Ишемғолов. **Күҙ тоноу** 1) күрмәҫ булыу (берәй көслө тойғо тәьҫиренән ярһығанда). *Ҡурҡып күҙҙәре тонған;* 2) аптырау, йөҙәү. *Арба таба алмай күҙем тонды.* **Күҙ тотоу** *ҡар.* **күҙ терәү.** *Нәфиҡ ҡарттың күҙ тотоп торған берҙән-бер улы һуғышҡа китте.* М. Ғафури. **Күҙ төбәү** *ҡар.* **күҙ текәү. Күҙ төшөрөү** ҡарашты йүнәлтеү. *Беҙ берәм-берәм [өйҙәге] кешеләргә күҙ төшөрөп сыҡтыҡ. Улар ҙа беҙгә ҡараны.* Д. Юлтый. **Күҙ төшөү** *кемгә, нимәгә* 1) күреү, күреп ҡалыу. *Иртәнсәкәй тороп тышҡа сыҡһам, күҙем төштө умырзаяға* (Халыҡ йырынан); 2) оҡшатыу, яратыу. *Уҫалһың, ҡыҙыҡай. Һинең менән бергә эшләп йөрөй торғас, күҙ төшөп-нитеп ҡуйһа — харап!* Н. Мусин. **Күҙ туйыу** ҡарап танһыҡ ҡаныу. *Атаҡайым мине йәштән бирҙең, күрә алманым күҙем туйғанса* (Сеңләүҙән). **Күҙ түбәгә сығыу** сама белмәй шаярыу, тайнаҡһыҙланыу. **Күҙ тышта ҡалыу** салт ҡояштан ингәс, күрмәҫ булыу. **Күҙ уғы** халыҡ ырымынса, күҙҙең арбай торған сихри көсө. *Ҡара күҙҙә күҙ уғы күп була.* **Күҙ уйнау** нимә менәндер әҫәрләнеп ян-яҡҡа ҡаранғанды белдерә. **Күҙ уңынан төшөү** иғтибарҙан ситтә ҡалыу. **Күҙ уңында тотоу** иҫәптә, иғтибарҙа тотоу. *Беҙ Ырымбурға «Хөсәйениә мәҙрәсәһен күҙ уңында тотоп барһаҡ та, эш беҙ уйлағанса барып сыҡманы.* Т. Йәнәби. **Күҙ һабыны** *ҡар.* **һабын. Күҙ һалыу** 1) ҡарау, күҙ ташлау. *Шәл аҫтынан күҙен һала, күрмәгәнгә һалышып* (Халыҡ йырынан); 2) оҡшатыу, иғтибар итеү. *[Заһит:] Сафура матур бит ул, күҙ һалыусылар булыр инде.* Һ Дәүләтшина. **Күҙ һатыу** кәрәкмәгәнгә, буштан-бушҡа ҡарау; күҙәтеү. *Өлкәнерәктәр йәйләп тарала. Йәштәр араһында бер үҙемә күҙ һатып ултырыу уңайһыҙ ине. Мин дә ҡуҙғалдым.* Ф. Иҫәнғолов. **Күҙ һирпеү** ҡапыл ғына ҡарау; ҡараш ташлау. *Күҙен һирпһә күңелеңде иретә, һүҙен әйтһә — йөрәгеңде елкетә.* Я. Ҡолмой. **Күҙ һөҙөлөү** йоҡо баҫып, күҙ йомолоп барыу. **Күҙ шарҙай булыу** аптырауҙан, ҡурҡыуҙан һ. б. күҙ ҙур асылыу. *Күсәр хандың аптырауҙан күҙҙәре шарҙай булды, ти* (Әкиәттән). **Күҙ әйләнеү** асыу менән аҡшайыу. *Күҙең-башың ҡыйшайып, аташ күҙең әйләнеп, кемгә тейереңде белмәйһеңме, ҡорсаңғы.* Ш. Шәһәр. **Күҙ әйәрмәү** *нимәгә* күреп өлгөрә алмау (бик етеҙ хәрәкәткә ҡарата). *Айһылыуҙың .. бармаҡтарының йөрөшөнә күҙ әйәрмәй.* З. Биишева. **Күҙ эленеү** *ҡар.* **күҙ һөҙөлөү. Күҙ юҫығына** ҡарап, тоҫмаллап. *Күҙ юҫығына сығып киттек. Тәүҙә бер һуҡмаҡ һымаҡ ерҙән барғайныҡ, торабара уныһы ла бөттө.* Н. Мусин. **Күҙ яҙҙырыу** ҡарап торған, күҙәткән кешенең алдынан китеү, юғалыу, уға күренмәй башлау. *Күҙ яҙҙырып ҡасыу.* **Күҙ яҙлыҡтырыу** юғалтыу, күрмәй башлау (ҡарап торған, күҙәтелгән кеше йәки нәмәне). *Үмәр ҡарт, сысҡан һағалаған ҡарсыға һымаҡ, күҙ яҙлыҡтырмай килене артынан күҙәтә.* Ш. Янбаев. **Күҙ яҙылдырыу** *ҡар.* **күҙ яҙҙырыу. Күҙ яҙыу** юғалтыу, күрмәй башлау (ҡарап торған, күҙәтелгән кеше йәки нәмәгә ҡарата). *[Егет] төлкө артынан бер үҙе китте, ти .. Урманға барып ингәс, төлкөнән күҙ яҙҙы, ти* (Әкиәттән). **Күңел күҙе** эске һиҙем, зиһен. **Күрер** (*йәки* **ҡарар**) **күҙгә** ҡарап тороуға. *Күрер күҙгә матур түгел, әллә ниңә яратам* (Халыҡ йырынан). **Ҡара күҙ** *иҫк.* егерме биш тинлек тәңкә. **Ҡар күҙе тишелеү** *ҡар.* **ҡар. Ҡом күҙ** ҡомһоҙ. **Ҡырын күҙ менән ҡарау** 1) асыуланып, асыу менән ҡарау. *Яратманы дуҫым мине хатаһын әйткән өсөн, ҡырын ҡарап, минең менән һөйләшмәй йөрөй бөгөн.* Ш. Бикҡолов; 2) яратмау, хуп күрмәү. *Ҡайһы бер хужалыҡ етәкселәре арышҡа ҡырын күҙ менән ҡарай башланы.* «Совет Башҡортостаны», 1968, 9 август. **Ҡыш күҙе ҡараңғы** ҡышҡы кейемгә нәфислек мотлаҡ түгел, тигән мәғәнәлә ҡулланыла. **Мәҙекүҙе булыу** (*йәки* **төшөү**) *ҡар.* **мәҙе. Ни күҙе менән** оятҡа, хурлыҡҡа ҡалғанда әйтелә. *Ни күҙем менән күренәйем.* **Ослo күҙ** тейешһеҙҙе күреп барған кешегә ҡарата әйтелә; оҫҡор күҙле. **Тауыҡ күҙ** саҡ ҡына ҡараңғыла ла күрмәй торған күҙ ауырыуы. **Ут күҙе** яҡтылыҡ, ут. **Үҙ күҙең менән күреү** бер нәмәнең ысынлығын иҫбатлау өсөн әйтелә. *Бабсаҡтың һигеҙ ир менән килгән юлын Мәсем хан үҙ күҙе менән күрҙе.* «Бабсаҡ менән Күсәк». **Үҙ һүҙле, үгеҙ күҙле** бик еңмеш, үҙ һүҙен бирмәгән кешегә әйтелә. **Энә күҙендәй**

бәләкәй генә (тишеккә ҡарата). **Энә күҙенән үткәреү** бик ныҡ төпсөп тикшереү, темтекләү. **Эт күҙ** һөмһөҙ, мәғәнәһеҙ кешегә ҡарата әйтелә. **Яҡты күҙҙә** яҡтыла, ҡараңғы төшмәҫ борон. **Яман күҙ менән ҡарау** *ҡар.* **ҡарау. Ят күҙ** сит кешегә ҡарата әйтелә.

● *Ас күҙгә кеше ҡулындағы ҙур күренер.* Әйтем. *Дуҫ күҙеңә ҡарап әйтер, дошман артыңда гәйбәт һатыр.* Мәҡәл. *Егет булһа мут булһын, ике күҙе ут булһын.* Мәҡәл. *Күҙ алдында маҡтама, күҙ артында хурлама.* Әйтем. *Күңел күҙе күрмәһә, маңлай күҙе ботаҡ тишеге.* Мәҡәл. *Ҡараңғының күҙе юҡ.* Әйтем. *Үҙе түйгән, күҙе түймаған.* Әйтем. *Көсләп аҫҡан күҙҙең нуры юҡ.* Мәҡәл.

**КҮҘАЛЛАУ** *ҡ. кит.* Күҙ алдына килтереү, фекерләү. *[Шағир] халыҡтың поэтиклаштырылған биографияһын күҙаллау аша уның оло яҙмышы хаҡында һүҙ алып бара.* Ә. Вахитов.

**КҮҘ-БАШ** *и. йыйн. әйл. ф.* Бөтә йөҙ; төҫ-баш. *Күҙе-башы күгәреп бөткән.*

♦ **Күҙ-баш алыу** ашығыс эштәрҙе бөтөрөп, бер аҙ бушау. *[Рәхимә — Булатҡа:] Саҡ ҡына күҙ-баш алайым да, өйөндө матур итеп аҡлап бирәйем.* К. Кинйәбулатова. **Күҙ-баш тоноу** шашыу, ярһыу. *Күҙе-башы тонған һәнәкселәр, ҡулаҡтар .. Әсмәләрҙең өйөнә килеп инде.* «Совет Башҡортостаны», 1967, 29 июль. **Күҙ-баш уйнаҡлау** (*йәки* **уйнау**) йылтаңлап ян-яҡҡа ҡарау. *Ҡыҙҙар араһында Фәриә тигәне, күҙе-башы уйнаҡлап, кешенең һәр һүҙенә биш тапҡыр яуап ҡайтарып тора.* Н. Мусин. **Күҙгә-башҡа күренеү** кеше күҙенә күренеү. *[Хисмәтулла] китә лә аҙналар буйы күҙгә-башҡа күренмәй.* Я. Хамматов.

**КҮҘГӘ-КҮҘ** *р. ҡар.* **ҡара-ҡаршы.**

**КҮҘГӘНСӘК** *и. диал.* Күҙләнсек, таҙ ҡарын.

**КҮҘГӘНӘК** *и.* **1.** Тәҙрә быялаһының бер бүлкәте; өлгө. *Бүрке менән тәҙрәгә килеп ҡағылыуы булды, бер ҙур күҙгәнәк, селпәрәмә килеп, ҡойолоп та төштө.* Ғ. Байбурин.

**2.** Индек ҡапҡаның кәртәләрен һалыу өсөн бағанаға уйылған тишек.

**3.** *диал. ҡар.* **күҙәнек** 3. *Балауыҙ күҙгәнәге.*

**КҮҘГӘНӘКЛӘТЕҮ** *ҡ. йөкм. ҡар.* **күҙгәнәкләү.**

**КҮҘГӘНӘКЛӘҮ** *ҡ.* Тәҙрә күҙгәнәген быялалау. *Күҙгәнәкләп ҡуйыу.*

**КҮҘГӘНӘС** *и.* **1.** Ваҡ-ваҡ ҡына тишек.

**2.** *ҡар.* **күҙәнәк** 2.

**КҮҘҘӘЙ** *р.*, **күҙҙәй итеп** Ситенән артыла яҙғансы; мөлдөрәмә. *Күҙҙәй тулы. Күҙҙәй итеп һалыу.* ■ *Гөлйөҙөм .. сөм генә алдырға күҙҙәй тултырылған ҡымыҙ тотоп килеп сыҡты.* Ф. Иҫәнғолов.

**КҮҘЕГЕҮ** (күҙек*г*) *ҡ.* Күҙ тейеп боҙолоу.— *Ҡыҙҙар һеҙгә ни булды? Әллә күҙектегеҙме? Яҡшы ғына уйнап-көлөп һөйләшкәндә, эште боҙа башланығыҙ.* Ш. Шәһәр.

**КҮҘЕГЕШЕҮ** *ҡ.* Яҡшы мөнәсәбәттә булған ерҙән, күҙ тейгән һымаҡ, ҡапыл боҙолошоу.

**КҮҘЕКТЕРЕҮ** *ҡ.* Күҙ тейҙереү.

**КҮҘЕЛДЕРЕК** *и.* **1.** Күҙҙе төрлө нәмәнән һаҡлау өсөн кейә торған тирә-яғы көплө күҙлек. *Мотоциклист күҙелдереге.*

**2.** *диал. ҡар.* **күҙлек** 1.

**КҮҘЕНӘН** *р.* Һауыттың ситенән артыла яҙғанса. *Күҙенән итеп ҡойоу.* ■ *Иҙән уртаһында тәрән агас ялгаш. Һыуы күҙенән.* Һ. Дәүләтшина.

**КҮҘ-КҮҘ** *р.* Ваҡ ҡына тишектәрҙән, күҙҙәрҙән ғибәрәт. *Боҙ күҙ-күҙ булып уйылган.*

**КҮҘКӘ** *и. диал. ҡар.* **күҙгәнәк** 1.

**КҮҘ-ҠАШ** *и. йыйн. әйл. ф.* Кешенең күҙе, ҡашы, бөтә йөҙө. *Ауыҙың-башың остаңлап, һүҙсән булма, киленсәк; күҙең-ҡашың йылмаңлап, күҙсән булма, киленсәк* (Туй йырынан).

♦ **Күҙ-ҡаш араһында** *шул уҡ* **күҙ менән ҡаш араһында** (*ҡар.* **күҙ**). **Күҙ-ҡаш көтөү** түҙемһеҙлек менән көтөү.

**КҮҘ-ҠОЛАҠ** *и. йыйн.* Ҡараштырып, күҙәтеп тороусы; ҡараусы, күҙәтсе. *Балаларға күҙ-ҡолаҡ кәрәк.* **Күҙ-ҡолаҡ булыу** күҙ һалыу, иғтибар итеү, ҡараштырыу. *[Ҡарағол:] Мозой, һин уға [Әпкәләйгә] күҙ-ҡолаҡ бул. Ни һөйләй, ҡайҙа бара — барыһын да аңдып торорға кәрәк.* Д. Юлтый.— *Һинең гәйбәт, сафсата һатып, донъяңды .. онота торған гәҙәтең бар. Донъя һинең ҡулыңа ҡалған. Күҙ-ҡолаҡ бул.* С. Кулибай.

**КҮҘЛЕ** *с.* Күҙе булған; күрә алған, яҡшы күргән. *Үткер күҙле.*

♦ **Күҙле бүкән** *ҡар.* **бүкән.**

**КҮҘЛЕ-БАШЛЫ** *с. ҡар.* **башлы-күҙле.**

**КҮҘЛЕҒАТА** *и.* Баҫыуҙа, урман ҡырҡҡан ерҙә үҫә торған ирен сәскәлеләр ғаиләһенә ҡараған, йөнтәҫ һабаҡлы, ҡарама япраҡлы баллы ҡый үлән.

**КҮҘЛЕК** *и.* **1.** Күреү һәләтен яҡшыртыу йәки күҙҙе ҡаплау, ҡояштан һаҡлау өсөн кейә торған ике быяланан ғибәрәт оптик прибор. *Алтын тирәсле күҙлек. Ҡара күҙлек. Күҙлек быялаһы.* ■ *[Гөлсибәр инәй:] Күҙҙәрем насарланды. Күҙлек алып биргәйнеләр, ҡул эше — маҙар тотҡанда кейеп тә ултырам.* С. Агиш.

**2.** *күсм. сығн. клш.* Нимәгәләр нигеҙләнгән ҡараш, уй. *Экономик күҙлектән ҡарағанда.* ■ *Минең тамырҙарымда һаман ауыл ҡаны ҡайнай икән әле. Һәр нәмәне иреклe-ирекһеҙҙән ауыл кешеһе күҙлегенән сығып баһалайым.* Ф. Иҫәнғолов.

**3.** *диал. ҡар.* **битлек** [1] 1.

**КҮҘЛЕКЛЕ** *с.* Күҙлек кейгән, күҙлеге булған. *Күҙлекле кеше.*

**КҮҘЛЕ-КҮҘЛЕ** *с.* Ваҡ ҡына тишектәре, күҙәнәктәре булған. *Күҙле-күҙле таш. Икмәк ҡабарып, күҙле-күҙле булып бешкән.*

**КҮҘЛУТ** *и.* Ирен сәскәлеләр ғаиләһенә ҡараған, емешсәһе өйкөмләнеп күҙ-күҙ булып урынлашҡан, баллы ҡый үлән. *[Ҡарттарҙың] тарыһы уңмай, тары урынына бил быуарҙан билсән, һарут, күҙлут үҫә.* Ж. Кейекбаев.

**КҮҘЛӘНЕҮ** *ҡ.* Күҙле-күҙле булыу; тишек, күҙ барлыҡҡа килеү. *Күҙләнеп тороу.*

**КҮҘЛӘНСЕК** *и.* Көйөшлө малдың ашҡаҙанындағы икенсе бүлек, күҙле-күҙле ҡарын; таҙ ҡарын.

**КҮҘЛӘҮ** [1] *ҡ.* **1.** Күҙәтеү, ҡарау. *Ауыл яҙ каршылай. ..Ҡояш күҙләй яландарҙы, һәр бер өй алдын.* Ғ. Әмири. /Ҡарай-ҡарай эҙләү. *Ҡуныр*

*кыуаҡ күҙләп буҙ тургайҙар сырлап оса бейек һауала.* Ғ. Амантай.

**2.** Һайлап алыу өсөн ҡарау (ҡыҙҙы). *Ҡыҙ күҙләү.*

**3.** *диал.* Һабаҡлау, һаплау. *Энә күҙләү.*

● *Айһыҙ төндә ҡыҙ күҙләмәйҙәр.* Әйтем. *Ярлы ил эҙләй, бай файҙа күҙләй.* Мәҡәл.

**КҮҘЛӘҮ** [2] *к. ҡар.* **күҙгәнәкләү.**

**КҮҘЛӘҮЕК** *и.* **1.** Бәләкәй генә шишмә. *Зәйтүнә яҡындағы һалҡын күҙләүектән бер сәйнүк менән һыу алып килеп, .. аҫҡаҡҡа элде.* Ғ. Ибраһимов.

**2.** *диал.* Күләүек.

**КҮҘЛӘШЕҮ** *к. урт.* **1.** *ҡар.* **күҙләү** [1] **1.** *Батыр ергә ырыҫ та, донъялағы ҡырыҫ та, икәү бергә менгәшеп, бер-береһен күҙләшеп, күләгәләй йөрөйҙәр.* «Урал батыр».

**2.** *ярҙамл. ҡар.* **күҙләү** [1] 2. *Ҡыҙ күҙләшеү.*

**КҮҘЛӘШТЕРЕҮ** *к.* Ике яҡты ҡара-ҡаршы килтереп осраштырыу (низағты асыҡлау, дөрөҫлөктө билдәләү өсөн). *[Заһит:] Был алдыҡ. Мине Трофимовтың үҙе менән күҙләштерегеҙ.* Я. Хамматов.

**КҮҘМӘ-КҮҘ** *р.* Ҡара-ҡаршы, йөҙгә-йөҙ килеп. *Күҙмә-күҙ осрашыу.*

♦ **Күҙмә-күҙ алдау** күҙгә ҡарап алдау.

**КҮҘСӘ** *и. диал. ҡар.* **күҙ** 5. *Картуф күҙсәһе.*

**КҮҘСӘН** *с.* Күпте күреүсән, тейешле-тейешһеҙҙе күреп барыусан. *Күҙең-ҡашың йылмылдап, күҙсән булма, киленсәк* (Туй йырынан).

● *Кеше күрә-күрә күҙсән була, һөйләй-һөйләй сәсән була.* Мәҡәл.

**КҮҘҺЕНДЕРЕҮ** *к.* Күҙ тейҙереү.

**КҮҘҺЕНЕҮ** *к.* Күҙ тейеп ауырыу, боҙолоу; күҙегеү. *Күҙҙәрең күҙһенмәһен, мин һоҡланып туймам ҡарап.* Ш. Бабич.

**КҮҘӘГӘ** *и. иҫк.* Һыйырҙың ыҫлаған елен тиреһенән ҡылыслап, моронлап яһаған һауыт (шыйыҡ нәмә өсөн); мурҙай.

**КҮҘӘЙ** *и.* Бер башҡорт ырыуының исеме (әйеләргә инә). *Шайтан күҙәй. Ҡыр күҙәй.*

**КҮҘӘК** *и. диал. ҡар.* **күҙәү** [1] 3.

**КҮҘӘМӘ** [1] *и.* Нимәләндер сифатын, күләмен күҙ менән самалау; күҙ самаһы. *Күҙәмәгә билдәләү.* ■ *Был өлөш Ваһап ҡартҡа .. күҙәмә менән бер дисәтинәгә бәләп бирелгән сиҙәм ине.* Ж. Кейекбаев.

**КҮҘӘМӘ** [2]: **күҙәмә бармаҡ** *диал.* һуҡ бармаҡ.

**КҮҘӘМӘЛӘҮ** *к.* Нимәнеңдер сифатын, күләмен күҙ менән билдәләү. *[Азамат] тәүҙә йылҡының ниндәй нәҫелдән .. икәнен күҙәмәләй, шунан һуң ғына ҡулға төшөрөү яйын ҡарай.* «Ағиҙел», 1970, № 1.

**КҮҘӘНӘК** *и.* **1.** Тере организм төҙөлөшөндәге протоплазма, ядро һәм көптән торған иң ябай берәмек. *Нервы күҙәнәктәре. Япраҡ күҙәнәктәре. Күҙәнәк ядроһы. Күҙәнәктең бүленеше.*

**2.** Тиреләге күҙгә күренмәҫлек ваҡ ҡына тишек. *Арҡа күҙәнәктәренә кер инеп әсеттерә.* С. Агиш.

**3.** *ҡар.* **күҙәү** [1] 2.

**4.** Балауыҙҙағы оя. *Бала күҙәнәге. Инә күҙәнәге. Эре күҙәнәкле кәрәҙ.*

**КҮҘӘНӘК-АРА** *с.* Күҙәнәктәр араһындағы. *Күҙәнәк-ара матдә.*

**КҮҘӘНӘКЛЕ** *с.* Күҙәнәктәрҙән (1 мәғ.) торған, төҙөлөшөндә күҙәнәктәр булған.

♦ **Бер күҙәнәклеләр** бер генә күҙәнәктән торған тереклектәр (мәҫ. бактериялар).

**КҮҘӘНӘКЛЕК** *и.* **1.** Күҙәнәктең көбөн тәшкил иткән матдә; целлюлоза.

**2.** Кеше һәм хайуандар организмындағы тоташтырғыс майлы кәүшәк туҡыма. *Тире аҫты күҙәнәклеге.*

**КҮҘӘТЕЛЕҮ** *к. төш. ҡар.* **күҙәтеү** [1]

**КҮҘӘТЕҢКЕРӘҮ** *к.* Күҙәтә (1 мәғ.) биреү, күҙәтә төшөү.

**КҮҘӘТЕҮ** [1] *к.* **1.** Кем йәки нимәнеңдер эш-хәрәкәтен иғтибар менән оҙаҡ итеп ҡарау. *[Малай] атаһының алдына ултырған да, .. мейестә дөрләп янған утты күҙәтә.* Ғ. Әмири. *Мин уның [Йәнтимерҙең] йөрөш-торошон күҙәтәм.* С. Агиш. / Эҙәрлекләп аҫтыртын ҡарау; аңдыу. *1911 йылдан Февраль революцияһына тиклем Мәжит Ғафури полиция күҙәтеүендә була.* «Башҡорт АССР-ының тарихы», 1966. *Ҡарауылсылар Искәндәрҙе уята. Ул икенсе ат менеп, Гөлһамистың артынан күҙәтә китә* (Әкиәттән).

**2.** Ниндәйҙер эш-хәлдең булыу-булмауын, булыу кимәлен, эшләнешен, башҡарылышын һ. б. ҡарау, тикшереү. *Тәртипте күҙәтеү. Эште күҙәтеү.* ■ *Линияларҙы күҙәтеү өсөн, телефонистарға ярҙам итеү өсөн Новиковты ебәрергә булғандар.* Д. Юлтый.

**3.** Тикшереп белеү өсөн ниҙәндер үҫеш-барышын ҡарау. *Тәбиғәтте күҙәтеү. Күҙәтеү — белем һәм тәрбиәнең мөһим сығанағы.* ■ *Һуңғы ваҡытта .. төҙөлөштә экспертизаның һәм авторлыҡ күҙәтеүенең ролен күтәреүгә ҙур иғтибар бирелә.* «Совет Башҡортостаны», 1985, 13 ноябрь.

**4.** Кем йәки нимә тураһындалыр ҡайғыртыу маҡсатынан сығып эш итеү. *Үҙ файҙаңды күҙәтеү.* ■ *Кил, әй, сабып, үҙеңде хуп төҙәткел. Яманға барма, яҡшы юл күҙәткел.* М. Өмөтбаев.

♦ **Күҙәтеү пункты** дошман яғын, һуғыштың барышын ҡарап тора торған урын.

**КҮҘӘТЕҮ** [2] *и. гәҙиттә күбр. күпл.* Эш-хәлдең үҫеш-барышын тикшереү эше; күҙәтмә. *Метеорологик күҙәтеүҙәр.*

**КҮҘӘТКЕ** *и.* Ниҙәндер торош-барышын ҡарап, һаҡлап тороу эше; контроль. *Башҡортостан урмандары .. һис бер күҙәткеһеҙ ҡалды.* «Совет Башҡортостанының ун йылы», 1929.

**КҮҘӘТКЕЛӘҮ** *к.* Һирәк-һаяҡ күҙ ташлау (күҙәтеү, аңдыу маҡсатында).

**КҮҘӘТМӘ** *и.* Ниҙәндер үҫеш-барышын ҡарап тикшереү эше. *Күҙәтмә яһау. Район гәзиттәларына яһалған күҙәтмә.*

**КҮҘӘТСЕ** *и.* **1.** Ҡарап күҙәтеп тороусы. *Күҙәтсе офоҡта танктар күренеүен хәбәр итте.* «Башҡортостан батырҙары», 1959.

**2.** Эш-хәлдең торошон, эш барышын ҡарап тороусы. *[Андрей] ябай күҙәтсе генә булмай, килгән һайын беҙҙең эштәге кәмселектәрҙе күреп, бөтөрөү юлдарын өйрәтте.* Д. Исламов.

**КҮҘӘҮ** [1] *и.* **1.** Энә, мәрйен, төймәләрҙәге еп үткәрә торған тишек; күҙ. *Төймә күҙәүе. Энә күҙәүе.* / Элмәк хеҙмәтен үтәгән бәләкәй генә тишек. *Аҫҡыс күҙәүе. Күнәк ҡолағының күҙәүе.*

**2.** Көпшәк нәмә эсендәге ваҡ-ваҡ ҡына ҡыуышлыҡ. *Һыулы һәм нефтле ҡатламдарҙа шыйыҡлыҡ күҙәүҙәргә .. тупланған була.* К. Тимергазин.

**3.** Селтәр биҙәктең күҙ-күҙ булып торған тишеге.

**4.** *диал. ҡар.* **күҙәнәк** 4.

♦ **Энә күҙәүендәй** бик бәләкәй. *Энә күҙәүендәй генә тишек.* **Энә күҙәүенән үткәреү** бик ныҡ ентекләп тикшереү.

**КҮҘӘҮ** [2] *ҡ.* **1.** Атыу өсөн ҡоралды сәпкә турылау; тоҫҡау, төҙәү. *Күҙәмәй атыу.* ■ *Һунарсы тиҙ генә яны менән уғын алып, эткә күҙәй* (Әкиәттән).

**2.** *диал.* Еп үткәреү; һабаҡлау.

● *Күҙәмәй осҡан ҡош ҡуныр урын тапмаған.* Мәҡәл. *Ҡатыныңһәпрә булһа, энәңде үҙең күҙәрһең.* Мәҡәл.

**КҮҘӘҮ** [3] *ҡ.* Ярма өсөн тын бойҙайҙы һыулап килелә төйөү. *Ярма күҙәү.*

**КҮҘӘҮ** [4] *ҡ.* Болғатыу, куҙғатыу (утты).

● *Утын ағасы менән ут күҙәмә.* Мәҡәл.

**КҮҘӘҮЕК** *с.* Күҙе, күҙәүе булған; тишекле. *Күҙәүек мунсаҡ. Күҙәүек мәрйен.*

**КҮҘӘҮЛЕ** *с.* **1.** Күҙе, тишеге булған; күҙәүек. *Күҙәүле мунсаҡ.*

**2.** Ваҡ ҡына ҡыуышлыҡтарҙан торған, күҙле-күҙле булған. *Күҙәүле тау тоҡомдары. Күҙәүле есемдәр.*

**КҮҘӘҮЛӘҮ** *ҡ.* Тишекле-тишекле итеп биҙәкләү; селтәрләү. *Шәлдең ситен күҙәүләп бәйләү.*

**КҮЖӘ** *и. ҡар.* **күзә.**

**КҮЗЕРЕК** [*рус.* козырёк] *и. һөйл.* Козырёк. *Күзерекле фуражка.*

**КҮЗӘ** *и.* **1.** Бөтәү ашлыҡты ҡабығы һыҙырылғансы килелә төйөп яһаған ярма. *Күзә төйөү.*

**2.** Шул ярманан бешергән аш.

**КҮЗӘЛӘ** *и. диал.* Күзә.

**КҮЙ** [*фарс.*] *и. иҫк. кит.* Ауыл.

**КҮК** [1] *с.* **1.** Спектрҙағы төп төҫтәрҙең береһе; фиолет менән зәңгәр араһындағы төҫ; шул төҫтә булған. *Аҡһыл күк. Ҡара күк. Күк буяу. Күк күлдәк.* ■ *Салауат кейгән күк сәкмән Гөлбәзиркәйенә саҡ икән* (Халыҡ йырынан). **Ҡыҙыл күк** фиолет төҫ. / Болотһоҙ асыҡ һауа төҫөндәге. *Күк һауа.* ■ *Күк төҫөндәй зәңгәр һинең күҙҙәр, күңелеңдә — күктең киңлеге. Күҙҙәреңдә тәүге күргән көндән, ошо күк төҫ миңә һөйкөмлө.* Р. Шәкүров. / Алыҫтан йәки тәрәндән зәңгәрләнеп күренгән. *Күк диңгеҙ. Күк сағыл. Күк түбә.* ■ *Ҡыуаҡ, урман, сахра, күк арҡалар барыһы ла нурға биҙәнгән.* Х. Ғәбитов.

**2.** Көлһыу төҫтәге, күкһел. *Күк болот. Күк төтөн.* ■ *Уҙән буйына әкрен генә күк томан һарыла.* З. Биишева.

**3.** Йәнлек, ҡош-ҡорт, үҫемлектең төҫө буйынса төрөн билдәләгәндә ҡулланыла. *Күк күгәрсен. Күк ҡарсыға. Күк тирәк. Күк әрем.* ■ *Бөтә шыршылар кеүек үк, күк шыршы ла тәүге йылдарҙа бик аҡрын үҫә.* Ф. Мәҡсүтов. / Ҡайһы бер йәнлек, ҡош-ҡортҡа эпитет итеп ҡулланыла. *Күк бәрҙе. Күк шоңҡар. Күк бүре.* ■ *Күк ыласындың балаһы бауҙа үлә талпынып.* Салауат Юлаев.

**4.** Йәшел (үләнгә ҡарата). *Күк ут ваҡыты.* // *Һыйырҙар күккә туйҙы.* ■ *Йылға ғына буйы күк үлән ашап ҡына тора күк дүнән* (Халыҡ йырынан).

**5.** Аҡ (атҡа ҡарата). *Күк буҙ. Күк юрға.* ■ *Күк бейә әллә тамағы туҡлыҡтан, әллә иртәнге һалҡынса һауаға рәхәтләнеп, бышҡыра-бышҡыра атлай.* Ә. Вәли. **Тимер күк** саф ҡорос төҫөнә яҡын ҡараһыу буҙ (атҡа ҡарата). *Егеттәрҙең һөйөп еккән аты — тимгел-тимгел тимер күк.* Ғ. Мәсғүт.

♦ **Күк бауыр** бауыр аҫты күкшел төлкө (ҡара төлкө менән ҡыҙыл төлкөнән килеп сыҡҡан тоҡом). **Күк ҡанат** *диал.* бәрҙе. **Күк сәскә** *ҡар.* **сәскә. Күк табан** аяҡ аҫты туңған мал. **Күк талаҡ итеү** *ҡар.* **талаҡ** [1]. **Күк һөт** бик ныҡ шыйыҡ һөт. **Күк яшыҡ** бик ныҡябыҡ (иткә ҡарата).

**КҮК** [2] *и.* Тәндең ҡан һауып төҫө үҙгәргән ере. *Күҙ төбөнә күк төшкән. Тәненән күк китмәй.*

**КҮК** [3] *и.* **1.** Ерҙән көмбәҙләнеп күренгән һауа, ерҙән юғарғы тараф. *Аяҙ күк. Зәңгәр күк. Күккә етерлек.* ■ *Ҡап-ҡараңғы төн, вә күктә ай ҙа юҡ, йондоҙ ҙа юҡ.* Ш. Бабич. **Күк бите** (*йәки* **йөҙө, көмбәҙе**) ер өҫтөнән күренгән һауа көмбәҙе. / Ер йөҙөн уратып алған йыһан арауығы. *Күк бушлығы. Күк есемдәре.*

**2.** Дини ҡарашса, шул көмбәҙ өҫтөндәге алла, фәрештәләр урыны. *Күктә алла, ерҙә иблис, мин — малай. Береһе «дин» тип, береһе «мин» тип тарҡылай.* Ш. Бабич. **Күк батшаһы** тәнре.

**3.** Йәшен йәшнәүе. *Күк тауышы.* ■ *Тәүге ямғыр яуып, күк килде.* Х. Ғәбитов. **Күк күкрәү** йәшен йәшнәгәндә, дөбөр-шатыр тауыш сығыу. *Ерҙе һелкетеп күк күкрәне, .. ямғыр шәбәйҙе.* Я. Хамматов.

♦ **Ер менән күк араһы** *ҡар* **ер. Ете ҡат күк өҫтө** иң юғарғы бейеклек. *[Ҡотлояр:] Уларҙы ете ҡат күк өҫтөнә менеп, ете ҡат ер аҫтына төшөп, шәм менән эҙләһәң дә таба алмайһың инде.* Һ. Дәүләтшина. **Көлөн күккә осороу** *ҡар.* **көл. Күккә аштырып** (*йәки* **күтәреп**) **маҡтау** бик ныҡ шаштырып маҡтау. **Күккә ашыу** (*йәки* **олғашыу**) 1) бик юғары күтәрелеү. *Тирә-яҡта түбәһе күккә олғашҡан тауҙар;* 2) сик-саманан ашыу. *Салауаттың күргән ғазаптары ерҙән ашып, күккә олғашты* (Халыҡ йырынан). **Күк кәзәһе** (*йәки* **тәкәһе**) *ҡар.* **һаралйын. Күк ҡапҡаһы** (*йәки* **ҡапыһы, шаршауы**) **асылыу** дини хөрәфәт буйынса, йәнәһе, ҡәҙер кисендә һауала яҡты нур балҡып китә, имеш, ошо ваҡытта телә гән теләк ҡабул була. **Күк меридианы** *ҡар.* **меридиан. Күктең төбө төшкән** (*йәки* **тишелгән**) оҙаҡ яуған ямғырға зарланып әйтелә. *Күктең төбө тишелгәндәй туҡтауһыҙ ямғыр яуа. Ерҙә баҫыр урын юҡ.* В. Исхаҡов. **Күктән төшөү** көтмәгәндә, үҙенән-үҙе барлыҡҡа килеү. *Ижадсы ла, һығышсы ла, эшсе лә булдың һин, Башҡортостан! Яҡты көндәр һиңә күктән төшмәне.* Р. Шәкүров. **Күктән төштөңмө әллә** яңы тыуҙыңмы әллә тигән мәғәнәлә әйтелә. **Күк экваторы** *ҡар.* **экватор. Күңел күге** *шиғр.* эске донъяның иң ҡәҙерле ере, түре. *Һин иркәм, күңелем күгендә, балҡып торған йондоҙ көндөҙ ҙә.* Ш. Бикҡол. **Түбә күккә тейеү** бик ныҡ ҡыуаныу. *Улын бисәләр маҡтағанда, Һыуһылыу әбейҙең түбәһе күккә тейҙе.*

Ғ. Дәүләтшин. **Танауҙы күккә сөйөү** нык маһайыу, эреләнеү.

● *Ҡошон осорған күккә ҡарар, ҡуйын юғалтҡан ергә ҡарар.* Мәҡәл.

**КҮК**[4] *и.* Дымланып, сереп барған нәмә өҫтөндә барлыҡҡа килгән күкшел ҡатлам; үңәҙ. *Күк баҫҡан. Күк еҫе килә.*

**КҮК**[5] *бәйл. һөйл.* Кеүек.

**КҮКБАШ**[1] *и. шул уҡ* **шайтан үләне** (*ҡар.* **шайтан**).

**КҮКБАШ**[2] *и.* Ҡарабаш турғайҙар ғаиләһенә ҡараған, күк түбәле, һары түшле, йәшел ала ҡанатлы ваҡ турғай; күкәнәш.

**КҮКЕ** *и. диал.* Кәкүк.

**КҮКЕЛ** *и. диал.* Ҡараҫҡы.

**КҮКЕЛДӘҮ** *ҡ.* Кәк-күк тип ҡыҫҡырыу (кәкүккә ҡарата). *Ҡайҙалыр бик яҡында ғына кәкүк саҡырҙы. Алыҫта .. икенсеһе күкелдәй башланы.* Һ. Дәүләтшина.

**КҮКЕН** *и. диал.* Күкйөн.

**КҮКЙӨН** *и.* Ҡорбан балыҡтар ғаиләһенә ҡараған йәшел һыртлы йоҡа ғына йылтыр йылға балығы. *Шәрәфи ағай .. был йылымға һыу өҫтөндә йылтырап йөҙгән күкйөндәрҙән башҡа бер балыҡ та инмәҫен бик яҡшы белә ине.* И. Насыри.

**КҮК-КҮМГӘК** *с.* Төҫһөҙ, көлһыу күк (төҫө боҙолған, буҙарған, нәмәгә ҡарата). *Ҡуян артынан эт менән йөрөгән саҡтарҙа .. күк-күмгәк булып өшөгәнем бар.* Ә. Чаныш.

**КҮКЛЕ-ЙӘШЕЛЛЕ** *с.* **1.** Күк менән йәшел ҡатнаш. *Күкле-йәшелле яулыҡ.*

**2.** Үҙ төҫөн юғалтҡан, төҫө ҡасҡан, күгәреп-буҙарып киткән. *Был хәбәрҙе ишетеп, Зифа күкле-йәшелле булып китә.* Ғ. Байбурин.

**3.** *күсм.* Йән өшөткөс йәмһеҙ, сыйылдаҡ (тауышҡа ҡарата). *Күкле-йәшелле тауыш.*

**КҮКЛӘҮ**[1] *ҡ.* Күк төҫкә индереү, күккә буяу.

**КҮКЛӘҮ**[2] *ҡ. диал.* Ауалау. *Бейек тауҙа күкләгән ҡарсығалай бул, балам* (Туй йырынан).

**КҮКЛӘҮ**[3] *ҡ.* Кәк-күк тип ҡыҫҡырыу. *Ул [кәкүк] оя ла яһамай, бала ла сығармай, шуға йәйҙең яртыһын күкләп йөрөй ҡаңғырып.* «Ҡуҙыйкүрпәс менән Маянһылыу».

**КҮКРӘК** *и.* **1.** Кәүҙәнең муйындан ҡорһаҡҡа тиклемге алғы өлөшө. *Күкрәк һөйәге. Күкрәккә ҡыҫыу. Күкрәк менән ҡаплау. Ҡулды күкрәккә ҡуйыу.* ■ *Маянһылыу Ҡуҙыйкүрпәстең күкрәгенә ятып иланы ла иланы, ти.* «Ҡуҙыйкүрпәс менән Маянһылыу». **Күкрәк ауыҙы** күкрәк һөйәгенең аҫты, ашҡаҙан тәңгәле. **Күкрәк таҡтаһы** күкрәктең алғы яҫылығы. / Кәүҙәнең йөрәк, үпкә урынлашҡан эске өлөшө. *Күкрәк ҡыуышлығы. Күкрәк тултырып тын алыу.* ■ *Сәгиҙә күкрәгенән атылып сығырҙай булып типкән йөрәген усы менән баҫты.* М. Тажи. *Муйылдың хуш еҫенә күкрәгем киңәйеп китте.* Н. Мусин. **Күкрәк ҡапҡасы** күкрәк менән ҡорһаҡ ҡыуышлығын айырып торған яры. **Күкрәк ситлеге** күкрәктең ҡабырға һәм түш һөйәге менән сикләнгән ҡыуышлығы. **Күкрәк пәрҙәһе** *диал.* күкрәк шаршауы. **Күкрәк шаршауы** күкрәк ҡыуышлығы менән эс ҡыуышлығын бүлеп торған яры. / *күсм.* Кешенең физик көс сығанағы, көс-ғәйрәтенә ҡарата әйтелә. *Үҙ күкрәгем менән тапҡан малым үтәр әле тормош кәрәген.* Д. Юлтый. / *күсм.* Кешенең хис-тойғоһо тупланған шартлы урын; күңел, йөрәк. *Күкрәктәге шатлыҡ. Күкрәк ялҡыны. Күкрәктә йылы тойғо һаҡлау.* ■ *Һин инең бит уның күкрәк серен һайрап-һайрап миңә белдергән.* Ш. Бабич. *Йырлаусы ла әҙәм йырлай алмай, күкрәгендә зары булмаһа* (Халыҡ йырынан).

**2.** *күсм. с. мәғ.* Тәкәббер. *[Рәхимә:] Ул тиклем күкрәк булырлыҡ Айбулаттың ни нәмәһе бар! Кесе кешегә әҙерәк ҡаҡҡанды-һуҡҡанды ла күтәреп өйрәнергә кәрәк.* Һ. Дәүләтшина.

**3.** Ҡатын-ҡыҙҙың түше; имсәк. *Күкрәк һөтө.* ■ *[Талпынып] йөҙгәндә ҡыҙҙарҙың яңы ғына ҡалҡып килгән нәфис аҡ күкрәктәре күренеп-күренеп ҡала.* З. Биишева.

**4.** Кәбәндең киң урта өлөшө. *Күкрәкле кәбән.* **Күкрәк һәнәге** кәбәндең күкрәк өлөшөн һалғанда ҡулланыла торған урта оҙонлоҡтағы ағас һәнәк. / *күсм. шигр.* Өҫкө йөҙ, өҫ (ер-һыуға ҡарата). *Ер күкрәге. Тау күкрәге.* ■ *Агиҙелдең күкрәгендә аҡ пароходтар йөҙә* (Халыҡ йырынан).

**5.** (*йәки* **күкрәк ағасы**) Арбаның алғы яҫтығы менән артҡы күсәрен тоташтырған ике буй ағас. *Ҡыҫҡа күкрәкле арба. Арба күкрәге. Күкрәк ағасы һынған.* **Оҙон күкрәк [арба]** бүрәнә ташыу өсөн ҡулайлаштырылған оҙон арба.

**6.** *диал. ҡар.* **күкрәксә** 2.

◆ **Күкрәк арба** *диал.* бәләкәй арба. **Күкрәк кереү** *шул уҡ* **түш кереү** (*ҡар.* **түш**[1]). *Күкрәк кереп тын алыу. Күкрәк кереп һөйләшеү. Күкрәк кереп эшләү.* **Күкрәк көсө** *ҡар.* **көс. Күкрәк ҡағыу** 1) маҡтаныу, кәпәренеү. *Байгильдин колхозды байыттым, тип күкрәк ҡаға.* Х. Ғиләжев; 2) елкенеү, йөрәкһеү. *Күкрәк ҡағып юрғаларһың, ялың һыйпап һөйәрмен.* Р. Ғарипов. **Күкрәк ҡалҡыу** үҫеп, эшкә ярарлыҡ булыу. *Үҫеп күкрәге ҡалҡҡас, ул [Татлыбай] йәйләүҙә ололар менән бер ҡатарҙан дегет ҡайнатты, бесән сапты, һунарға йөрөнө.* Ш. Шәһәр. **Күкрәк ҡатланыу** күкрәк сурайып сығыу (иртә йәки оҙаҡ ултырған йәш балала була). **Күкрәк ҡыҫыу** тын алыу ауырлашыу. *Хәтмуллин Хәкимов артынан өлгөрә алманы, уның күкрәге ҡыҫты, сикә тамырҙары ярһып типте.* Ғ. Аллаяров. **Күкрәк сире** үпкә сире. **Күкрәк тауышы** көслө көр тауыш. *[Айбулат] көслө күкрәк тауышы менән ялан яңғыратып йырлай.* Һ. Дәүләтшина. **Күкрәк төбө** иң изге тойғолар һаҡланған урын; йөрәк түре. *Күкрәк төбөндә ятҡан сер. Күкрәк төбөнән сыҡҡан һүҙ.* **Күкрәк хәстәлеге** *ҡар.* **күкрәк сире. Күкрәк һуғыу** маҡтаныу, шапырыныу. *[Ефим:] Ғәзиз дә килә, теге «.. мин комсомол!» — тип, күкрәк һуғып йөрөгән Мидхәт тә килә.* Ғ. Хәйри. **Тар күкрәкле булыу** тар күңелле, көнсөл булыу.

**КҮКРӘКЛЕ** *с.* Күкрәге киң, көслө. *Киң күкрәкле кеше.*

**КҮКРӘКЛӘНЕҮ** *ҡ. төш. ҡар.* **күкрәкләү.** *Күкрәкләнде кәбән, күркәмләнде, күп тә үтмәй, кәбән осланды.* Р. Ғарипов.

**КҮКРӘКЛӘҮ** *ҡ.* Күкрәк өлөшөн һалыу (кәбәндең); күкрәкле итеү. *Кәбәнде күкрәкләү.*

**КҮКРӘКСЕН** *и.* Күкрәккә йылы булһын өсөн кейә торған еңһеҙ ҡыҫҡа кейем; көртөй.

**КҮКРӘКСӘ** *и.* **1.** Оло йәштәге ҡатын-ҡыҙҙың

иҙеүҙе ябыу өсөн күлдәк эсенән кейгән ҡорап йәки сигеп эшләнгән түш ябыуы; түшелдерек. / Ҡатын-ҡыҙҙың түште күтәреү өсөн кейгән эске кейеме; бюстгальтер.

**2.** Түшле алъяпҡыстың өҫкө өлөшө. *Күкрәксәле алъяпҡыс.* / Ашатҡанда баланың күкрәгенә бәйләй торған ҡыҫҡа ғына алъяпҡыс.

**КҮКРӘМҺЕҮ** *к. диал.* Дан менән маһайыу.

**КҮКРӘТЕҮ: күк күкрәтеү** 1) күк йөҙөн дөбөр-шатыр килтереү. *Ел-дауылдар туҙҙырып, күк күкрәтеп ямғыр яуа.* Ш. Бабич; 2) дер һелкетеү (тауыштың көсөн, дәһшәтен күрһәткәндә ҡулланыла). *Хан болоттай ҡапыл ҡарайҙы, .. дауыл өрҙө һулыш алышы, күк күкрәтте яман тауышы.* М. Кәрим.

**КҮКРӘҮ** *к.* **1.** (*йәки* **күк күкрәү**) Дөбөр-шатыр итеү (күккә, болотҡа ҡарата). *Йәшен уты һүнеү менән.., ер һелкетеп күк күкрәне.* Я. Хамматов. *Ҡыбла яҡтан сыҡҡан ҡара болот яумай ғына үтә күкрәп* (Халыҡ йырынан). / Һауаны яңғыратып гөрләү, гөрһөлдәү. *Алыҫта ауыр орудиелар күкрәй, минометтар ухылдай.* Ә. Чаныш. *Уның [батраҡтың] тауышы матур киң яланда йыраҡтарға китә күкрәп.* Б. Ишемғол.

**2.** Хәл ҡылымдың *-п* формаһында төп ҡылымға эйәреп «бик шәп булып», «шаулап, гөрләп» тигән мәғәнәләрҙе белдерә. *Күкрәп уҙған ғүмер. Күкрәп сәскә атыу. Күкрәп үҫеү.* ■ *Көтөүлектәре, бесән сабыр болондары Ағиҙелде ике яҡлап, йәйрәп, күкрәп ятҡан.* Ә. Вахитов.

**КҮКСИН** *и.* Зәйтүн ағасы һымаҡтар ғаиләһенә ҡараған хуш еҫле, аҡ йәки күк сәскәле декоратив ҡыуаҡлыҡ; сирень. *Күксин ҡыуағы.* ■ *Тәҙрә ҡаршыһындағы күксин сәскәгә күмелеп, тирә-яҡҡа хуш еҫ таратып ултыра.* В. Исхаҡов.

**КҮКСӘ** [1] *и.* Йәшкелт күк төҫтәге ваҡ күгәүен. *Күксә малға тынғы бирмәй.*

**КҮКСӘ** [2] *с. диал. ҡар.* **күгә** [2]. *Күксә имән.*

**КҮКСӘЙ** *и.* **1.** Тимер күк төҫтәге ат. *Кәртәләге күксәй һукраныҡ кешнәп ебәрҙе.* Т. Хәйбуллин.

**2.** Кәүҙәгә бәләкәйерәк аҡ төҫтәге сарлаҡ; күк сарлаҡ.

**3.** *диал.* Күкйөн.

**КҮКСӘНӘЙ** *и. диал.* **1.** *ҡар.* **күксәй 1.** *Һөйөп кенә менгән күксәнәйем тау артында ҡалды тышаулы* (Халыҡ йырынан).

**2.** Сәүек эт.

**КҮКТАШ** *и.* Баҡыр купоросы; йәшел-һаңгәр.

**КҮКТӘҮ** *к. диал.* Типсеү.

**КҮКҺАҒЫҘ** *и.* Каучук бирә торған күп йыллыҡ үлән.

**КҮКҺЕЛ** *с.* **1.** Күк төҫкә тартым; күкшел. *Күкһел зәңгәр. Күкһел ҡара.* ■ *Хаят .. күкһел ебәк күлдәген һайлап кейҙе.* Һ. Дәүләтшина.

**2.** Саҡ ҡына күк төҫкә тартым аҡ; күкшел. *Күкһел томан.* ■ *Һыу өҫтөнә күкһел пәрҙә тартып, киң торбаның төтөнө тарала.* Ғ. Сәләм. / Асыҡ күренмәй томанланып торған (алыҫ нәмәләргә ҡарата). *Күкһел Ирәндектең итәгендә гөрләп тора бөгөн машина.* Б. Вәлит.

**КҮКҺЕЛЛЕК** *и.* Шыйыҡ күк төҫ, күкһел (2 мәғ.) төҫ; күкшеллек. *Күкһеллеккә сумды тыуған тупраҡ, дала еле хуш еҫ бөркөнө.* М. Кәрим.

**КҮКҺЕЛЛӘНЕҮ** *к.* Күкһел төҫкә инеү; күкшелләнеү. *Күкһелләнеп ятҡан тау.* ■ *Томан төшкән күкһелләнеп бәләкәй ауыл күренә.* Ғ. Ибраһимов. *Дим буйҙары йәнгә бигерәк яҡын, күкһелләнеп ята урманы.* М. Сөндөклө.

**КҮКҺЕЛЛӘТЕҮ** *к.* Күкһел итеү, күкһел төҫкә индереү. *Алыҫ тугайҙарҙы күкһелләтеп, ергә йәйелә ҡуйы күк томан.* Х. Ҡунаҡбай.

**КҮКҺЕҮ** *к.* Күк еҫе инеү. *Ярты-лаш ергә батҡан .. еүеш, күкһегән өйҙөң һауаһын еҫкәмәҫ өсөн аҙыраҡ урамда ултыр[ҙым].* З. Ғафури.

**КҮКҺӘҮ** *с. кәмһ.* Үпкә сирле. *Күкһәү кеше. Күкһәү һарыҡ.*

**КҮКҺӘҮЕЛ** *и.* Ҡатмарлы сәскәләләр ғаиләһенә ҡараған ҡаты йәшкелт сыбыҡлы ваҡ япраҡлы бейек ҡыуаҡ үлән; аҡ әрем. *Күкһәүел сабыу. Күкһәүел ағыу.*

**КҮКШЕЛ** *с.* **1.** Күк төҫкә тартым; күкһел. *Күкшел ҡара. Күкшел һоро.* ■ *Һатыусы күкшел төҫтәге бер күлдәкте күрһәтте.* Б. Бикбай.

**2.** Күгелйем аҡ; күкһел. *Күктә иренеп кенә күкшел болоттар йөҙә.* Д. Исламов. / Алыҫ булғанлыҡтан томанланып, күгелйем булып күренгән. *Күкшел тауҙар.* ■ *Ирәндектең күкшел таштарына .. мин һоҡланып, илаһи хайран ҡал[ам].* А. Игебаев.

**КҮКШЕЛЛЕК** *и. ҡар.* **күкһеллек.**

**КҮКШЕЛЛӘНЕҮ** *к.* Күкшел төҫкә инеү, күкшел булыу; күкһелләнеү. *Офоҡта күкшелләнеп ятҡан монар .. тулҡынланған кеүек күренә.* К. Мәргән.

**КҮКШЕЛЛӘҮ** *к. диал.* Төләү.

**КҮКШИН** [1] *и.* Арзанлы күкшел тауар. *Туныныҡ тышы күкшиндән.*

**КҮКШИН** [2] *с. диал.* Иҫке, күнә. *Күкшин кейем.*

**КҮКЬЯЛ** *и.* Башҡорт ерен һатып, байып йөрөгән кеше; ҡуштан. *Ауылдың күкъялдары. Һөс тиһәң, хәҙер баҫып таларға торған кешеләр ине.* Т. Хәйбуллин.

**КҮКӘЙ** *и.* **1.** Иркәктәрҙең енси күҙәнәктәр эшләп сығара торған ҡуш биҙе.

**2.** *һөйл.* Ҡоштарҙың һәм ҡайһы бер йәнлектәрҙең (мәҫәлән, гөбөргәйел, крокодилдың) бала сығарыу өсөн һалған йомро яралғыһы; йомортҡа. *Ҡаҙ күкәйе. Турғай күкәйе. Күкәй ҡабығы. Күкәй һалыу.* / Тауыҡтың аҙыҡҡа файҙаланылған шундай уҡ яралғыһы; йомортҡа. *Күкәй ағы. Күкәй һарыһы. Күкәй бешереү. Күкәй ҡурыу. Күкәйгә баҫҡан күмәс.* **Атаһыҙ күкәй** себеш яралғыһы булмаған күкәй. **Орлоҡ күкәйе** тауыҡтың бәләкәй генә етлекмәгән йомортҡаһы. **Яры күкәй** ҡабығы яралмаған күкәй.

**3.** Ҡайһы бер бөжәк, селәүсен кеүектәрҙең оҙонсараҡ ваҡ бөртөксәләрҙән торған яралғыһы. *Ҡырмыҫҡа күкәйе. Күбәләк күкәйе.*

**КҮКӘЙЛЕК** *и. ҡар.* **түллек.**

**КҮКӘНӘЙ** *и.* **1.** Күк төҫтәге һыйыр ҡушаматы.

**2.** *диал.* Алабуға.

**КҮКӘНӘШ** *и. ҡар.* **күкбаш** [2].

**КҮКӘС** *и. диал.* **1.** Күкйөн.

**2.** *күсм.* Йоҡа кәүҙәле кеше; ҡаҡса.

**КҮЛ** *и.* **1.** Тәбиғи һыу ятҡылығы. *Аҡҡан күл. Тоҙло күл. Түңәрәк күл. Тәрән күл. Күл балығы.*

*Күл камышы.* ■ *Ҡибла яҡтан ел иҫте, тулҡынланды күл өҫтө.* Ш. Бабич. *Башҡортостанда меңгә яҡын күл бар, уларҙың дөйөм майҙаны 20 мең гектарға етә.* М. Хисмәтов. **Күл яғаһы** күл башындағы яр буйы. *Күл яғаһы күк тирәк, күк тирәктең һаны юҡ* (Халыҡ йырынан).

**2.** *диал.* Күләүек.

♦ **Барыр ер, батыр күл юҡ** ярҙам һорап һыйыныр, морон төртөр кеше булмағанда әйтелә. **Күл буғаһы** (*йәки* **үгеҙе**) *диал.* мөншөгөр. **Күл йыуаһы** *ҡар.* **йыуа. Күл күәк** *йәки* **күлдәй** 1) иңе-буйы ҙур. *Күл күәк шәл;* 2) бик мул, күп. *Күлдәй тәҙрәнән ай ҡарай, йондоҙҙар йымылдаша.* З. Биишева. **Кәүсәр күле** дини ҡарашса, ожмахтағы шифалы, татлы күл. *[Зөлкәрнәй:] Их үҙебеҙҙең шишмә һыуҙары! Кәүсәр күлең бер яҡта торһон!* И. Абдуллин.

● *Илле илен маҡтар, йүкәле күлен маҡтар.* Мәҡәл.

**КҮЛБАБА** *и.* Ҡатмарлы сәскәләләр ғаиләһенә ҡараған һөңгө япраҡлы, һары сәскәле, бәпембәгә оҡшаған үлән (сәскәһе иртәнсәк асыла, төштән һуң йомола).

**КҮЛБЕТЕҮ** *ҡ.* **1.** Күп, мул итеү; эркелдереү. *Күлбетеп ҡоймаҡ майлау.*

**2.** Мул, иркен итеү. *Күлбетеп күлдәк тектереү.*

**КҮЛБЕҮ** *ҡ.* **1.** Күп, мул булып эркелеү, йәйелеү. *Күлбеп ятыу.* ■ *[Вася:] Эй, әсәй, бутҡаңдың күлбегән майы түңгәндер инде, шуға асыуланаһыңдыр.* Һ. Дәүләтшина.

**2.** Мул, иркен булыу. *Күлбеп торған күлдәк. Күлбеп торған шәл.* / Йомшаҡ ерҙә иркенләп, йәйрәп китеү. *Күлбеп ултырып сәй эсеү. Ҡат-ҡат яҫтыҡ өҫтөндә күлбеп ултырыу.*

**КҮЛДӘК** *и.* Йоҡа тауарҙан махсус өлгө менән теккән, бер ҡаттан торған өҫ кейеме. *Ебәк күлдәк. Сатин күлдәк. Сигеүле күлдәк. Балалар күлдәге. Ирҙәр күлдәге. Ҡатын-ҡыҙ күлдәге.* ■ *Хәҙер минең кейем-һалым да ауылдағыса түгел, киндер күлдәктәр урынына — ҡаласа тегелгән ситса күлдәк, бумажный булһа ла — салбар.* Т. Йәнәби. **Ауыл күлдәге** кеше араһына сыҡҡанда кейгән күлдәк. **Көсөк күлдәк** боронғо йола буйынса балаға тыуғас та кейҙерелә торған күлдәк. **Ожмах** (*йәки* **йәннәт) күлдәге** мәйеткә кәфен эсенән текмәй генә яһап кейҙергән күлдәк. **Эске күлдәк** эстән кейә торған еңһеҙ күлдәк. **Эт күлдәге** *диал. ҡар.* **көсөк күлдәк.**

♦ **Кейәү күлдәге** кейәүгә ҡыҙҙың ата-инәһе тотторған бүләк. **Ҡорос** (*йәки* **тимер) күлдәк** ҡорос дүңгәләктәрҙән эшләнгән һуғыш кейеме; ҡояҡ. *Салауаттың кейгән кейемкәйе ҡорос ҡына күлдәк — дүңгәләк* (Халыҡ йырынан). **Ялан күлдәк** күлдәксән. *Көндө бик йылытты, шулай булғас, мин ялан күлдәк кенә киттем* (Әкиәттән).

**КҮЛДӘКЛЕК** *и.* Бер күлдәккә етерлек итеп ҡырҡылған тауар. *Ебәк күлдәклек. Ситса күлдәклек.* ■ *[Ямал:] Эй, Мәҙинәкәйем, ҡыҙҙар магазинга әллә нисә килә. Ул күлдәклек алһындармы, яулыҡ алһындармы. Минән сығалар ҙа, тегенсегә йүгерәләр.* Ш. Насыров.

**КҮЛДӘКСӘН** *р.* Күлдәк өҫтөнән бер ни киймәй, күлдәк кенә кейгән көйө; ялан күлдәк. *Күлдәксән эшләү.* ■ *Ул күлдәксән ҡалған. Өҫтөндәге йыртыҡ туны, башынан бүрке ырғытылған, ситкә ташланған.* Ғ. Хәйри.

**КҮЛДӘК-ЫШТАН** *и. йыйн.* Ирҙәрҙең йоҡа кейеменең дөйөм исеме; күлдәк менән ыштан. *Күлдәк-ыштанлыҡ аҡса.*

**КҮЛДӘНӘН** *р. иҫк.* Осраҡлы ғына, көтмәгәндә. *Күлдәнән булған эш юҡ ул, ҡалай булһа ла һәр нәмәнең берәй сәбәбе була.* А. Таһиров.

**КҮЛДӘНӘНГЕ** *с. иҫк.* Осраҡлы ғына булған. *Күлдәнәнге эш.*

**КҮЛЕМ** *и.* Ҡыр эшендә: бер ял иткәндән икенсе ял иткәнгә тиклемге эш ваҡыты; һыуһын. *Иртәнге күлем. Киске күлем.* ■ *Бабайҙың өс күлемдә һөрәһен был малай [Бармаҡ] бер күлемдә бөтөрҙө, ти* (Әкиәттән). / Шул эш араһындағы ял ваҡыты; һыуһын. *Күлем еткән. Күлемгә туҡтау.* ■ *Был ниндәй ваҡытһыҙ туҡтау, был ниндәй ҡырын ятыу?!.. Күлем тиһәң — күлем түгел, төшлөк тиһәң — төш түгел.* С. Ҡудаш.

**КҮЛКЕТЕҮ** *ҡ. диал.* Күп итеү, эркелдереү. *Ямғыр яуғайны күлкетеп, бысраны бит күлдәге.* К. Кинйәбулатова.

**КҮЛКЕҮ** *ҡ. диал. ҡар.* **күлбеү** 1.

**КҮЛМӘК**[1] *и.* Үлән баҫҡан күлдең асыҡ урыны; күл мәкеһе. *Һыу алырға барҙым күлмәккә, ҡарап торҙом йөҙгән үрҙәккә* (Халыҡ йырынан).

**КҮЛМӘК**[2] *и.* **1.** *диал.* Күлдәк. *Йөн күлмәк. Ситса күлмәк.*

**2.** Бөртөклө ашлыҡтарҙың тышы; көп. *Һоло күлмәге. Күлмәкле бойҙай.*

**КҮЛӘГӘ** *и.* **1.** Нимәләрҙер ышығындағы ҡояш төшмәгән урын. *Ситән күләгәһе. Өй күләгәһе. Күләгә ҡороу. Күләгәлә ултырыу.* // *Күләгә урын.* ■ *Иптәш менән .. ағас күләгәһендә һөйләшеп ултырабыҙ.* Т. Йәнәби. *Һыу инә торған еребеҙ күпер аҫты күләгә* (Халыҡ йырынан).

**2.** Кеше йәки берәй нәмәнең ут, ҡояштан төшкән шәүләһе; күләткә. *Кеше күләгәһе. Ағас күләгәһе. Күләгә төшөү.* ■ *Бағана башында фонарь яна. Ул бик ныҡ сайҡалыу сәбәпле, будка күләгәһе әле бер, әле икенсе яҡҡа һикерә.* Х. Мохтар. *Күләгәләр шаҡтай оҙонайған.* С. Агиш.

**3.** *күсм.* Нимәләрҙер насар шауҡымы, тәьҫире. *Әйткеләне миңә яҡындарым: моңһоуыраҡ һуңғы йырҙарың. Әйе, уларға бит төшмәй ҡалмай күләгәһе үҙган йылдарҙың.* Ғ. Рамазанов. / Ауыр хистең йөҙҙәге сағылышы. *Булаттың .. йөҙөнә уйсанлыҡ күләгәһе төштө.* З. Ғәлимов.

**4.** *күсм.* Кемдеңдер ҡурсалауына, яҡлауына ҡарата әйтелә. *[Ауылда йөрөгән хәбәрҙәр] ата-әсәһенең күләгәһендә .. ултырған Гөлйөҙөмгә ныҡ ҡағылмай.* Һ. Дәүләтшина.

**5.** Әйлән-бәйлән, түңәрәк. *Йәштәр киске уйындар, күләгәләр ойоштора.*

♦ **Күләгә күәк** бер ҙә ҡалмай (һәр ваҡыт эйәреп йөрөгән кеше йәки нәмәгә ҡарата). *Күләгә күәк эйәреп йөрөү.* ■ *Ә ҡайғы ҡара күләгә күәк, уның [Ҡобораның] артынан ҡалманы.* Б. Бикбай. **Үҙ күләгәһенән үҙе ҡурҡа** ҡурҡаҡ кешегә ҡарата әйтелә.

**КҮЛӘГӘЛЕ** *с.* Ҡояш төшмәгән, күләгә ышығындағы. *Күләгәле урын.*

**КҮЛӘГӘЛӘНДЕРЕҮ** *ҡ. ҡар.* **күләгәләү.**

**КҮЛӘГӘЛӘНЕҮ** *к. төш. кар.* **күләгәләү.**

**КҮЛӘГӘЛӘТЕҮ** *к. йөкм. кар.* **күләгәләү** 1, 2.

**КҮЛӘГӘЛӘҮ** *к.* **1.** Ҡояштан ҡаплап күләгә яһау, күләгә итеү. *Күләгәләп ҡуҫҡыл бөйҙәйҙәрҙы.., бөҙрә башлы ап-аҡ төркөм болот үтеп бара баҫыу өҫтөнән.* Ғ. Мәсғүт. / Күләгә төшөрөү, ҡараңғылау. *Аҙыраҡ күләгәләп, [ҡатындың] бит-йөҙөнә сағылып төштө төнгө һорғолт ут.* Ғ. Сәләм.

**2.** *күсм.* Кем йәки нимәгәлер хас һыҙат, сифаттарҙы асыҡ күрһәтмәй ышыҡлау, ҡаплау. *Ул [образ] психологик яҡтан аҡланмаған һәм төп герой образын күләгәләп тора.* Р. Ниғмәти. *[Индрил:] Һәр кемдең ләззәт тапҡан бер нәмәһе була бит,— тип, уҙенең йомшаҡ яғын күләгәләргә тырыша.* Д. Юлтый.

**3.** *күсм.* Насар төҫ биреү, ҡара төшөрөү. *[Ауылда] йөрөгәндә ҡайһы бер күренештәр матур тәьҫораттарҙы күләгәләп, күңелде китеп тә ҡуйҙы.* «Совет Башҡортостаны», 1967, 18 август.

**КҮЛӘГӘТКӘ** *и. диал.* Күләткә.

**КҮЛӘМ** *и.* **1.** Ниҙең дә булһа буйы, арҡырыһы һәм бейеклеге менән үлсәнгән ҙурлығы; дәүмәл. *Куб күләме. Күләм үлсәүе.*

**2.** Ниҙең дә булһа һан иҫәбе менән билдәләнгән ҙурлығы. *Белем күләме. Эш күләме.* ■ *Аҡмулланың әҙәби мираҫы күләм яғынан артыҡ ҙур түгел.* С. Ҡудаш.

**3.** Берәй эш-хәлдең таралыш киңлеге. *Ҙур күләмдә алып барылған эш. Бөтә Союз күләмендә үткәрелгән ярыш.*

◆ **Күләм категорияһы** ниндәйҙер арауыҡ һәм ваҡыт эсендә эш-хәрәкәттең башҡарылыу төҫмөрҙәрен (уның башланыуын, тамамланыуын, ҡабатланыуын, дауамлы булыуын һ. б.) белдергән лексик-грамматик категория. *Күләм формалары.*

**КҮЛӘМ-ДӘРӘЖӘ** *и. йыйн.* Эш-хәрәкәттең, хәл-ваҡиғаның булыу һәм эшләнеү дәрәжәһен, күләмен белдергән грамматик категория. *Күләм-дәрәжә рәүеше. Күләм-дәрәжә хәле.*

**КҮЛӘМЛЕ** *с.* Күләме ҙур булған. *Күләмле әҫәр.*

**КҮЛӘҢ** *и.* Йылғаның ҡамалып ҡалған ҡолағы. *Иҙел күләңендә ай күк суртан, күләңкәйе ҡороп үлмәһен* (Халыҡ йырынан).

**КҮЛӘҢКӘ** *и. диал.* Күләгә.

**КҮЛӘТКӘ** *и.* **1.** Кеше йәки берәй нәмәнең ут ҡояштан төшкән шәүләһе. *Бурыл һыу эсергә төштө.. Бер аҙ эскәс, арттан килгән бер кеше күләткәһен күрҙе.* Ш. Шәһәр. / *күсм.* Үҙ ҡиәфәтен юғалтып, ҡараҫҡыға әйләнгән кешегә ҡарата; шәүлә. *Шәүәли ҡурҡыныс күләткә булып янында ултырған һаҡалтай ҡарттың ҡырҙан уратып һөйләгәнен бик үк аңлап етмәне.* Б. Бикбай.

**2.** *кар.* **күләгә** 1. *Ҡайын күләткәһе.*

**КҮЛӘҮ** *и. диал.* Күләүек. *Шиңгән генә ине гөлдәр һәм сәскәләр, туңған ине кескәй күләүҙәр.* Р. Ниғмәти.

**КҮЛӘҮЕК** *и.* **1.** Бәләкәй күл. *Беҙ икәүләп Һаҡмар буйына төшәбеҙ ҙә күләүектәрҙә балыҡ һөҙәбеҙ.* Б. Бикбай.

**2.** Соҡорҙа йыйылып ятҡан һыу. *Тротуарҙарға, ҙур-ҙур күләүектәр булып, быҫраҡ һыу йәйелде.* Х. Мохтар. *Яҙға ярһып ҡошсоҡ һөйөндө, тәүге күләүектә һыу инде.* Р. Бикбаев.

**КҮМГЕЛЕК** *и. диал.* Нигеҙ тупрағы.

**КҮМГЕЛЛӘНЕҮ** *к.* Күмгел төҫкә инеү. *Берәүһенә [приказчиктарҙың] шулай тигәйнем, оҡшаманы, йөҙө күмгелләнеп китте.* С. Агиш.

**КҮМГЕЛ(Т)** *с.* Күккә тартым (төҫкә ҡарата). *Ҡырҙағы ҡамылдар ҙа .. көҙгө ямғыр, ҡояш, ел-дауыл шойҡаны менән күмгелт төҫкә ингән.* Ғ. Дәүләтшин.

**КҮМГЕС** *и. диал. кар.* **кәтмән** [1] **1.**

**КҮМГӘК** *и.* Тәндең ҡан һауып күгәргән урыны; күк.

**КҮМГӘКЛӘНЕҮ** *к.* Күк төҫкә инеү, күгәреү (тәнгә ҡарата). *[Гөлкәйҙең] ауыр хәсрәттән күмер кеүек күмгәкләнгән күҙҙәренә йәш эркел[-де].* Г. Шәһәр.

**КҮМДЕРЕЛЕҮ** *к. төш. кар.* **күмдереү.**

**КҮМДЕРЕҮ** *к.* **1.** Өҫтән ҡаплатыу. *Сәскәндә орлоҡто тупраҡтың дымлы ҡатламына күмдерергә кәрәк.* «Совет Башҡортостаны», 1968, 17 апрель.

**2.** Күмергә, ерләргә, ихтыяр ҡуйыу. *[Мулла:] Мосолмандар зыяратына кафырҙы күмдерә алмайым, теләһә ҡайҙа күмегеҙ.* Һ. Дәүләтшина.

**КҮМЕЛДЕРЕК** *и.* Аттың түше аша тартылған эйәр ҡайышы. *Күмелдерек түшендә, арт һанында ҡойошҡан, ебәк сылбыр нуҡталы.* «Аҡбуҙат».

**КҮМЕЛЕҮ** *к.* **1.** *төш. кар.* **күмеү.** *Тупраҡҡа күмелеү. Ҡар менән күмелеү.* ■ *Батыр үлде, батыр күмелде, тип шатланма, ҡурҡаҡ!* М. Кәрим. *Һин ни күрмәнең, һалдат?! Бомбалар төштө өҫтөңә.. Күпме тереләй күмелдең..* Н. Нәжми.

**2.** *ҡайт. кар.* **күмеү.** *Сәскәгә күмелеү.* ■ *[Рахмай:] Инәй, мин иртәгә һеҙ килгәнсе, һаламға күмелеп йоҡлайым.* К. Кинйәбулатова.

**КҮМЕНДЕ** *и.* Өйҙөң тупраҡ менән күмелгән ниргә буйы; нигеҙ.

**КҮМЕР** *и.* **1.** Һүнгән ҡуҙ һәм шул рәүештәге яғыулыҡ. *Күмер ҡабы. Ҡайын күмере. Ҡарағай күмере. Күмергә ҡалыу. Күмергә әйләнеү. Күмер һүндереү. Самауырға күмер һалыу.* ■ *Ҡулыма алған был күмер — йортобоҙҙан ҡалған күмер ул.* Салауат Юлаев. / Нәҙек сыбыҡтарҙы томалап яндырыу юлы менән яһалған ҡәләм. *Күмер менән һүрәт төшөрөү.* / Янып, ҡара көйгән нәмә. *Айыуғолаҡ көл өйөмө күрҙе, ти. Барып бутап ҡараһа, унан күмер булып ҡатҡан бер көлсә тапты, ти* (Әкиәттән). **Баҙ күмере** томалап яндырылған ағастан төшкән күмер; ағас күмере. **Тере күмер** баҙлап ятҡан ҡуҙ. **Үле күмер** һүндерелгән күмер. **Күмер баҙы** (*йәки* **мейесе**) күмер үртәй торған соҡор. **Күмер ултыртыу** күмергә үртәр өсөн ағас өйөү. **Күмер үртәү** ағасты өйөп, томалап яндырып, күмер яһау. *Туҙҙан таҙа дегет ҡайнаттылар, күмер үртәнеләр, дуғын бөктөләр.* Н. Мусин.

**2.** Үҫемлек ҡалдыҡтарынан барлыҡҡа килгән ҡаты ҡаҙылма яғыулыҡ. *Таш күмер. Һоро күмер. Күмер брикеты. Күмер шахтаһы. Күмер ятҡылығы. Күмер сығарыу.* ■ *[Әнүәр] шахтер ине. Өс йыл самаһы күмер киҫте.* Ғ. Лоҡманов.

**КҮМЕРЛӘНДЕРЕҮ** *к.* Күмергә (1 мәғ.) әйләндереү.

**КҮМЕРЛӘНЕҮ** *к.* Күмергә (1 мәғ.) әйләнеү. *Күмерләнеп бөтөү.* ■ *Яна ағас, яна ағас, яна ла күмерләнә* (Халыҡ йырынан).

**КҮМЕҮ** *к.* **1.** Соҡор ҡаҙып, уның эсенә һалынған нәмәне өҫтән ҡаплау. *Балсыҡҡа күмеү. Ҡомға күмеү. Һалам менән күмеү.* ■ *— Танһыҡ икмәк, балам,— тине әсәй, көлгә күмеп икмәк бешерҙе.* Р. Аҙнағолов. / Ер менән тигеҙләп ҡаплау (соҡор урынды). *Баҙҙы күмеү. Соҡорҙо күмеү.* / Тупраҡ менән ҡаплап, йәшереү. *[Мәгфүрә:] Утар байының күмгән игенен тапҡандар.* Һ. Дәүләтшина. / *күсм.* Бик күпләп, өҫтө-өҫтөнә биреү. *Һорауҙар менән күмеп ташлау. Эш менән күмеү.* / *күсм.* Күп һанда булдырып мулыҡтырыу; сумдырыу. *Бәхеткә күмеү. Данға күмеү. Сәскәгә күмеү.* ■ *— Шәфҡәтем күп һеҙҙең өләшкә, күмермен шау алтын-көмөшкә.* М. Кәрим. / *күсм.* Таралып тотош биләү, солғау; сумдырыу. *Моңға күмеү. Нурға күмеү.* ■ *Һандуғастар .. урмандарҙы наҙлы йырға күмә.* З. Биишева.

**2.** Ер ҡуйынына ҡуйыу (мәйетте); ерләү. *Ҡәбергә күмеү.* ■ *Халыҡ Урал батырҙы бик ҙурлап, хөрмәтләп, ҡалҡыуыраҡ бер ергә күмде, ти.* «Урал батыр».

**3.** Тупраҡты йомшартып, үҫемлектең төбөнә өйөү. *Картуф күмеү. Сөгөлдөр күмеү.*

**4.** Ҡаплап аҫта ҡалдырыу. *Ағастарҙы ҡар күмеп киткән.* ■ *Тиҙҙән инде ҡыш та килер, болондағы әҙебеҙҙе күмер.* Ғ. Рамазанов. / *күсм.* Өҫтөнлөк алып баҫыу, һиҙҙермәү, ҡаплау. *Төрлө тауыштар бер-береһен күмеп китә.*

**КҮМЕШЕҮ** *к. урт. ярҙамл. кар.* **күмеү** 1—3. *Картуф күмешеү. Ергә күмешеү.*

**КҮМЕШТЕРЕҮ** *к.* Унан-бынан, арлы-бирле генә күмеү (1—3 мәғ.).

**КҮМЙЕҮ** *к. диал. кар.* **күмһеү** 1.

**КҮМ-КҮК** *с.* Бик ныҡ күк төҫ. *Күм-күк боҙ.* ■ *[Һалдат] ҡыҫып эсен тотҡан. Уның йөҙө ап-аҡ, ирендәре күм-күк.* Д. Юлтый. *Һыу буйында күксин күм-күк булған, бөҙрәләнгән икән балан да.* К. Кинйәбулатова.

**КҮМҺЕК** *с.* Күмһегән, көйгән. *Күмһек тәм.*

**КҮМҺЕТЕҮ** *к.* Ныҡ ҡыҙыу итеп көйҙөрөү, күмһегән тәм индереү. *[Кәримә:] һөттө күмһеткән ахыры.. Өйҙә көйөк еҫе.* С. Кулибай.

**КҮМҺЕҮ** *к.* **1.** Көйөү, көйөк тәме сығыу. *Күмһегән бутҡа.* ■ *Һөттө ныҡ ҡайнатма, күмһеп ҡуйыр. Уттың тандырында ғына йылытып ал.* Я. Хамматов.

**2.** *күсм.* Көнсөллөк менән көйөнөү. *Күмһеп йөрөүселәр ҙә табылды. Тар күңелле кешегә киң донъя ла тар булып күренә бит ул.* «Совет Башҡортостаны», 1968, 6 ғинуар.

◆ **Эс күмһеү** *кар.* **эс.**

**КҮМӘГӘЙ** *и.* Ирҙәр үңәсендәге сурайып торған кимерсәк.

◆ **Күмәгәй ҡатыу** тауыш бөтөү, тауыштан яҙыу.

**КҮМӘГӘЙЕҮ** *к.* Һан яғынан артыу; күбәйеү. *Егет ҡыҙ өйрәткәнсә барып, йылҡыларын эҙләп таба. Улар күмәгәйгән,.. кейекләнеп киткән, ти* (Әкиәттән).

**КҮМӘЙ** *и. диал.* **1.** Күмәгәй.

**2.** *кар.* **йотҡолоҡ** [1]

◆ **Күмәйеңдән алғыр** ҡарағағанда әйтелә. **Күмәй талыу** күп һөйләп арыу.

**КҮМӘК** *с.* **1.** Күп һанлы, күп. *Күмәк ғәскәр. Күмәк мал. Күмәк халыҡ. // Күмәккә буйһоноу. // Күмәк йөрөү.* ■ *Күмәк кеше бергә эшләгәндә, әллә нишләп эш үҙе лә ҡыҙыҡ була бит ул.* Ғ. Дәүләтшин. *Улар күмәк ине ул төндө.* Ғ. Амантай. *Бисәләр ҙә күмәк йыйылып киткәйне.* Һ. Дәүләтшина.

**2.** Коллектив менән алып барыла, башҡарыла торған, күп кеше ҡатнашлығындағы. *Күмәк бейеү. Күмәк тормош. Күмәк хужалыҡ. Күмәк эш.* ■ *Күмәк йыр башланды, кемдер баҫты гармун телдәрен.* Ғ. Сәләм.

● *Берәү бер тигәнсе, күмәк күлдәк өлгөртөр.* Мәҡәл.

**КҮМӘКЛӘҮ** *к.* Күп булып берләшеү, йыйылыу. *Күмәкләп йырлау. Күмәкләп эшкә тотоноу.* ■ *Эшләйҙәр күмәкләп, ер тулып, эшсе һәм игенсе бер булып.* Ғ. Сәләм. *Ете туған .. күмәкләп һунарға сығып киткән* (Әкиәттән).

● *Күмәкләгән яу ҡайтарған.* Мәҡәл.

**КҮМӘКЛӘШЕҮ** *к.* Күп булып берләшеү. *Күмәкләшеп йөрөү. Күмәкләшеп эшләү.* ■ *[Йүгерек батыр:] Һеҙ кемдәр һуң? Күмәкләшеп ҡайҙа китеп барған көнөгөҙ? — тигән* (Әкиәттән).

**КҮМӘКСЕЛ** *с.* Күмәк эшләү, күмәк йәшәүҙе яратыусан. *Үҙенең бөтә тәбиғәте менән кеше күмәксел. Уның өсөн яңғыҙлыҡтан да ҙурыраҡ язаның булыуы мөмкин түгел.* К. Әхмәтйәнов.

**КҮМӘРТЕЙ** *р. һөйл.* Тотош, бер юлы; тулайым. *Күмәртей алынған акса.*

**КҮМӘРТӘ** *с.* Күпләп, ҙур партиялар менән тулайым һатыуға йәки алыуға бәйле булған. *Күмәртә хаҡ.*

**КҮМӘРТӘЛ** *р. диал.* Төркөм булып, бер партия булып. *Өс-дүрт кеше күмәртәл йыйылып алаһың да, заводка әрҙәнә ҡырҡаһың.* Ж. Кейекбаев.

**КҮМӘРТӘЛӘП** *р.* Тотошо менән бергә, бер юлы; тулайым, күпләп. *Күмәртәләп алыу. Күмәртәләп түләү. Күмәртәләп һатыу.* ■ *Хәҙер махорканы күмәртәләп армияға тапшыра башлағас, ул [Брискин] сифат тигән нәмәне онотто.* Х. Мохтар. *Ил күргәндең күрҙек бөтәһен дә, күмәртәләп килде ҡайғылар.* М. Басыров.

**КҮМӘС** *и.* **1.** Һөткә, майға баҫып, тәмләп бешерелгән ваҡ икмәк. *Аҡ күмәс. Сөсө күмәс.* ■ *Күмәс бешерә беҙҙә һылыу ҡыҙҙар, мамыҡ мендәр кеүек күпертеп.* Р. Ниғмәти. *[Ҡыҙ] аш урыны әҙерләне, ҡуйы һөт һәм кукуруз күмәсе килтереп ҡуйҙы.* Б. Дим. **Ҡалаҡ** (*йәки* **таба**) **күмәсе** йоморҙҡаға он туҡып, ҡалаҡ менән табаға һалып бешергән күмәс. *Ғәҙәттә, Ҡәйүм ағай юлға киткәндә .. [еңгә] таба күмәсе бешерә торғайны.* М. Садыкова.

**2.** *һөйл.* Һурпаға бешкән эре йоҡа йәймә; ҡаҙаҡ һалмаһы.

◆ **Булмаһа булмай икән баҙарҙа сөсө күмәс** берәй нәмәне бик ныҡ эҙләп тә таба алмағанда әйтелә. *[Мин баҙарҙы] әллә нисә тапҡыр әйләнеп сыҡтым. Юк, булмаһа булмай икән баҙарҙа*

*сөсө күмәс тигәндәй, яҡташтар тура килмәне.* Ә. Вәли. **Сипарат күмәсе** *һөйл.* сепаратор камфораһы эсендәге түңәрәк ҡалҡыуыс.

**КҮМӘҪКЕ** *с. диал.* Күренер-күренмәҫ, беленер-беленмәҫ. *Күмәҫке яҙыу.* ■ *Кооператив лавкаһының алдына бәләкәй генә фанер таҡтаға күмәҫке итеп русса .. яҙып ҡуйған.* Ғ. Дәүләтшин.

**КҮН** [1] *и.* Йөнөн екетеп иләгән, эшкәртелгән тире. *Ҡара күн. Ҡыҙыл күн. Һары күн. Хром күн. Яһалма күн. Болан күне. Кәзә күне. Күн заводы. Күн иләү. // Күн бейәләй. Күн итек. Күн сумаҙан.* ■ *[Әхмәҙи] латыш байҙарына тире-яры апарып, күнгә иләтеп .. йөрөнө.* Ж. Кейекбаев. *[Әхмәҙулла бабайҙың] өҫтөндә еңелсә генә ҡара бишмәт, аяғында күн ҡата.* Ә. Вахитов. **Болғар күне** *иҫк.* заводта иләнгән яҡшы йомшаҡ күн. **Ҡоба күн** ирекләнмәгән, эшкәртеп еткерелмәгән күн. **Шыры күн** һауыт-һаба яһау өсөн ыҫланған күн.

♦ **Күн бит** ояла белмәгән; оятһыҙ, битһеҙ. **Күн ҡуңыҙы** *кар.* **ҡуңыҙ.**

**КҮН** [2] *и.* Аҡсаның герб төшөрөлгән яғы; ҡарағош.

**КҮНДЕРЕҮ** *ҡ.* **1.** Нимәгәлер өндәп ыңғайлатыу; ризалатыу. *Улар Талип менән икәүләп Сафураны бригадирлыҡҡа күндерҙе.* С. Агиш. *Ҡыҙыҡайы ҡаршы килмәй, күндерәйек атаһын* (Халыҡ йырынан).

**2.** Нимәгәлер өйрәтеп ыңғайлатыу, күнектереү. *Эшкә күндереү. Тәртипкә күндереү.* ■ *Эй, китап, мин аңғыраны төҙ юлға күндерһәнә.* Ш. Вабич. *Күңелемде изге эшкә күндер, хәйерһеҙ эштәрҙән һакла.* М. Өмөтбаев.

**3.** Кемгә йәки ҡайҙалыр төбәп ебәреү, тәғәйенләп еткереү. *Сәләм күндереү.* ■ *[Ҡаскын:] Килмәк абыз тағы өндәмә күндерергә китте.* Ғ. Ибраһимов.

**4.** Еренә еткереп башҡарыу, үтәү. *Кешенең йомошон күндереү.* ■ *[Муллагәле бабай] етмешкә етеп килгән ҡарт булһа ла, бер оло бригаданың нужаһын күндереп ултыра.* Р. Солтангәрәев.

**КҮНДӘМ** *с.* **1.** Кеше ыңғайлы, тыңлаулы. *Күндәм кеше. Күндәм ат. // Күндәм эшләү.* ■ *Ни кушһаң, шуны үтәй, Булат күндәм малай.* Ш. Виҡҡол. *Үгеҙҙәре аҙбарға күндәм генә керә, ә һыйырҙары ҡарыша.* М. Кәрим.

**2.** Эшкә ауан, тырыш. *Тайбәнең уңған да, күндәм дә булыуын һиҙеп алғас, байбикәләр уға хатта ирҙәр эшен дә йөкмәтә башланылар.* Х. Мохтар.

● *Күндәм ҡабат әйттермәҫ.* Әйтем.

**КҮНДӘМЛЕК** *и.* Күндәм булыу сифаты. *Кешенең күндәмлеге генә етәкселек итеү өсөн етмәүен, быный өсөн .. аҡыл да кәрәклеген төшөнгәйне инде [ул].* Ә. Әһлиуллин.

**КҮНЕ** *с. диал.* Күндәм.

**КҮНЕҒЕЛЕҮ** *ҡ. эйһ. ф. кар.* **күнегеү** [1]. *Күнегелгән инде көрәш юлы, ниңә кәрәк шыма, әҙере.* Ф. Рәхимғолова.

**КҮНЕГЕҮ** [1] (күнек*⁄*) *ҡ.* **1.** Билдәле бер шартҡа, берәй хәлгә өйрәнеү. *Тауышҡа күнегеү. Һыуыҡҡа күнегеү. Яңы урынға күнегеү.* ■ *Тора-бара Сәғиҙә ауыл тормошона күнегә башланы.* М. Тажи. *Әминбәк, бер аҙ күҙе күнеккәс, ҡараһа — был бер ҙур бүлмә булып сыҡҡан* (Әкиәттән). / Оҙаҡ бергә булыу арҡаһында үҙ-ара өйрәнеү; эйәләшеү. *Бер-береңә күнегеү.* ■ *Бер ай эсендә ауыл кешеләре [студенттарға] тамам күнегеп, эҫенеп алған.* Ф. Исәнғолов.

**2.** Оҙаҡ эшләү һөҙөмтәһендә берәй эш-хәрәкәткә өйрәнеү; оҫтарыу. *Быймасы кәләм тотоуға күнекмәгән бармаҡтарын көскә ипкә килтереп.., нык баҫып яҙырға тотондо.* Б. Бикбай. / Ниндәйҙер фекер, ҡараш йәки тәртипкә ғәҙәтләнеү. *Ауыл халҡы иртә торорға күнеккән.*

♦ **Ҡулға күнегеү** кеше янында торорға өйрәнеү (ҡырағай йәнлек, ҡошҡа ҡарата); ҡулға эйәләшеү. *Ярты йыл самаһы ваҡыт үтте, бүре балаһы тамам ҡулға күнегеп китте.* С. Кулибай.

**КҮНЕГЕҮ** [2] *и. кар.* **күнекмә** 2, 3

**КҮНЕКМӘ** *и.* **1.** Даими эш барышында тупланған тәжрибә. *Хеҙмәт күнекмәһе алыу.* ■ *[Гәрәйҙең] тәүге эше — эске бер ҡат кейемен .. йыуып алыу булды. Хәҙер инде уның бындай бисәләр эшендә ҙур күнекмәһе бар.* Б. Бикбай.

**2.** Хеҙмәттә, хәрәкәттә оҫолланыу өсөн башҡарылған эш. *Физик күнекмә үткәреү.* ■ *Йәйәү йөрөү .. физкультура менән шөғөлләнә башлаған олораҡ йәштәге кешеләргә яҡшы күнекмә булып тора.* «Башҡортостан ҡыҙы», 1986, № 1.

**3.** Үткән дәресте нығытыу өсөн бирелгән эш. *Күнекмәләр йыйынтығы. Күнекмә эшләү.*

**КҮНЕКТЕРЕҮ** *ҡ.* **1.** Билдәле бер шартҡа, хәлгә өйрәтеү. *Иртә торорға күнектереү. Һыуыҡҡа күнектереү.* / Үҙ-ара эйәләштереү. *Бер-береңә күнектереү.*

**2.** Нимәгәлер өйрәтеү. *Эшкә күнектереү.*

**КҮНЕҮ** *ҡ.* **1.** Кемдеңдер ихтыярына, өгөтләүенә ыңғайлау; ризалашыу. *Әйткәнгә күнеү.* ■ *Минең ситкә китеп уҡырға теләүемә әсәйем риза булһа ла, атайым бик үк күнеп етмәне.* Т. Йәнәби. *[Сәрүәр:] Нишләйем һуң һорауыңа әллә күнәйемме икән?* Х. Ибраһимов.

**2.** Ниндәйҙер шартҡа, хәлгә өйрәнеп, күңелдән ризалашыу. *Төн үткәреү Тимеркәй өсөн ҡайҙа ла бер. Ул уға күнгән инде.* Д. Юлтый. *Ахыры мин дә күнеп барам, айырылғанда һуҙһеҙ айырылам.., ҡайғым булһа, һинһеҙ ҡайғырам.* М. Басыров.

**КҮНЕШЕҮ** *ҡ.* **1.** *урт. кар.* **күнеү** 1. *Старшина Байсаров бер яҡтан.., господин Новалихин икенсе яҡтан, түбәндәге шарттарға күнешеп ошо договорҙы төҙҙөк.* Т. Хәйбуллин.

**2.** *диал.* Күнегеү. *Бер-береңә күнешеү. Күнешеп киткәнсе тороу.*

**КҮНСЕ** *и.* Күн иләүсе, күн эшләүсе.

**КҮНӘ** *с.* Кейелеп, тотолоп бер аҙ иҫкергән. *Күнә сәкмән. Күнә кейем.*

**КҮНӘК** *и.* **1.** Һыу йәки башҡа нәмә ташый торған ҡылыслы тәрән ҡалай һауыт; биҙрә. *Бер күнәк һыу. Буш күнәк. Һөт күнәге.* ■ *Сокор аръяғында оҙон сиртмәһенә күнәк тағылған бейек буралы ҡоҙоҡ бар.* Ә. Вәли. / Шундай уҡ ағас һауыт. *Имән күнәк. Йүкә күнәк.* / Һөт, ҡымыҙ өсөн тиренән ыслап эшләнгән һауыт. *Ҡымыҙ күнәге. Һөт күнәге.* **Бот күнәге** бер бот һыйышлы һауыт (үлсәү берәмеге итеп ҡулланыла). **Дегет күнәге** юл йөрөтөү өсөн дегет һала торған

һауыт; дегет силәге (арбаға тағып йөрөтөлә). **Төрөк күнәге** *иҫк.* ун ике килограмм һыйышлы күнәк.

**2.** (*йәки* **икмәк күнәге**) Икмәк әсетә торған тәпәшәк ағас һауыт.

**КҮНӘКЛӘҮ** *к.* Күнәк-күнәк итеү, күнәге менән йөрөтөү. *Күнәкләп ташыу.* ■ *Беҙҙә ҡыҙҙар һыуҙы көршәк менән ташымайҙар .. көйәнтәләп, күнәкләп алып киләләр.* З. Биишева.

♦ **Күнәкләп ҡойоу** бик шәп итеп яуыу, ҡойоп яуыу (көслө ямғырға ҡарата).

● *Күнәкләгән ҡунаҡ аткарған, кумәкләгән яу ҡайтарған.* Мәҡәл.

**КҮНӘК-САНАҠ** *и. йыйн.* Күнәк кеүек ағас һауыт-һаба. *Ҡыш улар [Баҡай ауылдары] туғын сапҡан, күнәк-санаҡ эшләгән.* Ж. Кейекбаев.

**КҮНӘКӘЙ** *и.* Күнәктән бәләкәйерәк, күнәсектән ҙурыраҡ ағас һауыт.

**КҮНӘСЕК** *и.* Бәләкәй генә ағас күнәк. *Бер күнәсек май.*

**КҮҢ** *и.* **1.** Тупраҡҡа әйләнеп, таҫланып ятҡан тиреҫ. *Күңдә киндер яҡшы үҫә. // Күң тупраҡ.*

**2.** *с. мәғ.* Ошо тупраҡ төҫлө; көрәнһыу һоро. *Күң буҫтау. Күң тауар.*

**КҮҢЕЛ** *и.* **1.** Кешенең эске рухи донъяһы, хис-тойғоһо, уй-фекере. *Күңел байлығы.* ■ *Урман бит ул — халыҡтың үҙ байлығы, урман — күңел зауығы, хәҙер уға үҙебеҙ хужабыҙ.* М. Тажи. **Күңел аҙығы** күңелгә йыуаныс биргән нәмә. / Хис-тойғолар тупланған фарази урын, хис-тойғолар сығанағы; йөрәк. *Күңел ашҡына. Күңел йыуана.* ■ *Һап-һары япраҡтар аҡҡанда борсоулы, һағышлы күңелем, шул алтын япраҡтар шикелле гел аға ашығып ғүмерем.* Ғ. Рамазанов. *Барсынһылыуҙың бөтә нәмәһе етеш, тик күңеле урынында түгел, ти. Кемделәр эҙләй, кемделәр көтә, ти.* «Алпамыша». **Күңелде аулау** (*йәки* **биләү**) бөтә уй-хисте тартыу. **Күңелде ҡытыҡлау** күңелде тынғыһыҙлап тороу, елкендереү. *Гөлбикә еңгә түҙә алмай. Ниндәйҙер бер эске шатлыҡ уның күңелен ҡытыҡлай.* С. Ҡудаш. **Күңелде тырнау** борсоу, йөрәкте өйкәү. **Күңел иләҫ-миләҫ булыу** (*йәки* **килеү**) төрлө уй-хистәрҙән болоҡһоу.

**2.** Күргән-белгәнде башта һаҡлау һәләте; иҫ, хәтер. *Күңелгә һалыу. Күңелдә һаҡлау.* ■ *Әбейҙең һүҙҙәрен Күсәк күңеленә алып ултыра.* «Бабсаҡ менән Күсәк».

**3.** Кешенең эске тәбиғәтен билдәләгән рухи сифаттар йыйымы. *Ҡаты күңел. Тынғыһыҙ күңел. Саф күңел. Нескә күңелле. Яҡшы күңелле кеше.* ■ *[Зөлхизә — көтөүсегә:] Бына ниндәй һәйбәт күңелле кеше һин, мырҙам.* Н. Иҙелбай. *Ирмен тигән егеттең әйтер һүҙе хаҡ булыр, күңеле уның аҡ булыр, яман эштән һаҡ булыр* (Ҡобайырҙан). **Аҡ күңелле** яҡшы уйлы, саф тәбиғәтле. **Асыҡ күңелле** алсаҡ мөнәсәбәтле, илгәҙәк. **Йомшаҡ күңелле** кешене йәлләп, илап барыусан. *[Гөлнәзирә] үҙ хәсрәте өсөн генә түгел, кеше ҡайғыһы өсөн дә иларға әҙер торған бик йомшаҡ күңелле ҡатын ине.* Ғ. Әмири. **Кеше күңелле** кеше хаҡын уйлап эш итеүсән, ярҙамсыл. **Киң күңелле** кешенән тарыҡмай торған; кешелекле. *Киң күңел менән ҡаршылау.* **Тар күңелле** кешенән тарыға торған, көнсөл тәбиғәтле, тар эсле. **Хуш күңелле** бер ҙә иҫе китмәй, бошмай торған тәбиғәтле. *Хуш күңелле булып, бәғзе мәлдә уңға-һулға ғәмһеҙ ҡараһаҡ, .. һағалап килер ул [дошман] арт яҡтан.* С. Кулибай.

**4.** Кешенең билдәле бер ваҡыттағы рухи хәле; кәйеф. *Көр күңелле кеше. Күтәренке күңел. Күңел төшөнкөлөгө.* ■ *Зөләйханың уңғанлығы арҡаһында артыҡ күңелһеҙләнергә тура килмәне. Сөнки ул көн һайын хат яҙып күңелде күтәрә ине.* Т. Йәнәби. **Күңел асылыу** кәйеф күтәрелеү, күңелләнеү. *Йөрәктә һаман ниндәйҙер төйөн торған кеүек, күңел һаман асылмай, шуға һөйләшке лә килмәй.* Н. Мусин. **Күңелде асыу** 1) кәйефте күтәреү; 2) ашарға теләк уятыу. *Лимон күңелде аса.* **Күңелде ҡырыу** 1) кәйефте боҙоу. *Күңелде ҡырған һүҙ ҙә булыр, ҡырыла бит йылға яры ла.* Р. Ғарипов; 2) уңайһыҙлыҡ, ҡәнәғәтһеҙлек тойғоһо уятып борсоу. *Тимер [Булатка] ҡатыраҡ бәрелде буғай, шул күңелде ҡыра.* Б. Бикбай. **Күңеле килеү** күңеле күтәренке, кәйефе яҡшы булыу. *Ул [Новиков] күңеле килгән саҡта бик йомшаҡ, һәр бер һүҙҙе тыңлаусан, иптәштәренә ярҙам итеүсән кеше. Күңеле килмәһә, хәҙер тоҡанып, ҡоро утын кеүек дөрләп янып, күтәрелеп китә.* Д. Юлтый. **Күңел ҡырылыу** кәйеф боҙолоу.

♦ **Бер күңелле** берҙәм ниәтле. **Ихлас күңелдән** (*йәки* **күңел менән**) саф ниәт менән, эскерһеҙлек менән. **Күңел аҙыу** 1) нәфсе боҙолоу; 2) рухи яҡтан тотанаҡһыҙланыу. **Күңел асыу** 1) уйнап-көлөп, кәйеф-сафа ҡылыу. *Уйнап алайыҡ әле, йырлап алайыҡ әле, бейешәйек, көлөшәйек, күңел асайыҡ әле* (Халыҡ йырынан); 2) ауыр уйҙан арынып, йыуаныу. *Йөрәгенең ярһыуын баҫырға, әҙерәк күңел асып ҡайтырға булып, Сәғиҙә һыу буйына килде.* М. Тажи. **Күңел баҫыу** ҡыйын саҡта кем, нимә менәндер йыуаныу, йыуанып албырғау; бауыр баҫыу. *Балаға күңел баҫыу.* **Күңел(де) беркетеү** уйға килеү. *Сынтимер ҡара айғырға бик ҡыҙыҡты, ти. Нисек кенә булһа ла шуны эҙләп тапмаҡсы булып, күңелен беркетеп ҡуйҙы, ти* (Әкиәттән). **Күңел биҙеү** һыуыныу, яратмай башлау. **Күңел биреү** ихласлыҡ ҡылыу. *Сәсеүен сәстеләр, ләкин эшләй белмәгәнгәме, күңел бирмәгәнгәме — кукуруз үҫмәне.* К. Мәргән. **Күңел болғаныу** 1) ҡоҫҡо килеү. *Кабина эсендә тын алғыһыҙ эҫе. Хөмәйрәнең күңеле болғана башланы.* Ф. Иҫәнғолов; 2) сирҡаныу (берәй насар, килешһеҙ эштән). **Күңел бөтөү** кемдеңдер бер ҡылығына бик риза, ҡәнәғәт булып ҡыуаныу. *Йәш килененең .. гөрөф-ғәҙәтте һаҡлауына, бигерәк тә уларҙың һүҙен тыңлап ҡасып килеүенә Йомай әбейҙең күңеле бөттө.* Һ. Дәүләтшина. **Күңел бөтәйтеү** ҡәнәғәтләнеү, тынысланыу. **Күңел булыу** риза, ҡәнәғәт булыу, оҡшатыу. *Бер ҡараһам һиңә, күңелем була, бер йылмайып ҡараһаң да ни була* (Халыҡ йырынан). **Күңел бушау** тынғыһыҙлаған уй-хистәрҙән арынып, тынысланыу. *Йырлайыҡ та „дуҫтар" һуҙып-һуҙып, бер йырламай күңел бушамай* (Халыҡ йырынан). **Күңел бәйләү** *ҡар.* **күңел ятыу.** *Уралды [Һомай] күргәс тә, батырлығын уның белгәс тә, яҡшылығын һиҙгәс тә Уралға күңел бәйләгән.* «Урал батыр». **Күңелгә ауыр алыу** кемдеңдер һүҙенә рәнйеү. *[Үмәр — Тимерғәли-*

*гә:] Ҡорҙаш, күңелеңә ауыр алма, минең көтөүсегә бирергә тип үҫтергән ҡыҙым юҡ.* Һ. Дәүләтшина. **Күңелгә ауыр булыу** тынғылыҡ бирмәй ғазаплау, борсоу; йөрәкте өйкәү (ниндәйҙер эш-хәл, һүҙ һ. б. ҡарата). *Һаубуллашмай китеүе күңелемә ауыр булды.* ■ *Сеү, ниңә уны [Татлыбайҙы] иҫкә алаһың? Кейәүҙең күңеленә ауыр булыуы бар..— тине Мәғфиә инәй.* Б. Бикбай. **Күңелгә килеү** 1) уйға, башҡа килеү; 2) алдан һиҙҙереү. **Күңелгә тейеү** ытырғаныу тойғоһо уятыу (ныҡ майлы, сөсө йәки үтә татлы нәмәгә ҡарата). **Күңелгә ятыу** уй-теләккә ярашлы булыу, оҡшау. *Зифа кәүҙәле, мөләйем йөҙлө был ҡыҙ, нисектер, беренсе күреүҙә үк күңелгә ятты.* З. Хисмәтуллин. **Күңелде алыу** мөхәббәт уятыу. *Мине һөйөр булһаң, башҡанан ҡас, мин гәйепһеҙ күңелем алынғас* (Халыҡ йырынан). **Күңелде баҫыу** ҡыйын саҡта кем йәки нимә менәндер йыуатыу, албырғатыу, тынысландырыу. **Күңелде тартыу** иғтибарҙы үҙенә йәлеп итеү. **Күңелде тырнау** борсоу; йөрәкте өйкәү. **Күңелен йығыу** *күбр. юкл.* кешенең һүҙе, теләге менән иҫәпләшмәй, рәнйетеү. *[Малай] насар ғына тай янына бара ла шуны алайыҡ, ти. Атаһы, ярар, быныҡ күңелен йыҡмайым, тип тайҙы ала* (Әкиәттән). **Күңелен китеү** рәнйетеү, хәтерен ҡалдырыу. **Күңелен күреү** яҡшы бер һүҙ, эш менән риза ҡәнәғәт итеү, ҡыуандырыу. *Алпамыша, ҡурайыңды тартһана, моңландырып өрһәнә, ҡыҙҙар күңелен күрһәнә.* «Алпамыша». **Күңелен һүреү (*йәки* һүрелтеү)** булған тойғоно, ихласлыҡты бөтөрөү. **Күңел етеү** тарһынмай ҡарау. **Күңел иреү** кемдеңдер һүҙенән, ҡылығынан риза булып, уға ҡарата яҡшы тойғо уяныу. **Күңел йомшарыу** 1) *ҡар.* **күңел нескәреү.** *Йылы һүҙгә күңеле йомшаған Заһит бите буйлап аҡҡан күҙ йәштәрен усы менән һөрттө.* Я. Хамматов; 2) *ҡар.* **күңел иреү. Күңел күге** *ҡар.* **күк** [3]. **Күңел күҙе** *ҡар.* **күҙ. Күңел ҡайтыу** ниндәйҙер тойғо бөтөп, һыуыныу. *Сит уйындарҙан күңел ҡайтты хәҙер.* Ш. Бабич. **Күңел ҡалыу** хәтер ҡалыу, үпкәләү. **Күңел ҡатыу (*йәки* ҡатыланыу)** төрлө ауыр кисерештәр тәьҫирендә күңел нескәлеге бөтөү, уҫалланыу. *Күңеле ҡатҡан ахыры, иламай ҙа.* **Күңел ҡылын сиртеү (*йәки* тирбәлдереү)** *шиғр.* нескә тойғолар уятыу. *Талдан-талға ҡунып һандуғас, күңел ҡылын сиртә яҙ булғас.* Я. Ҡолмой. **Күңел нескәлеге** төрлө кисерештәр менән әҫәрләнеүҙән уянған йылы тойғо. *Күңел нескәлеге етмәүҙән килгән ҡаты мөғәмәлә.* **Күңел нескәреү** хискә бирелеп, илағы килеү. **Күңел тартыу** яҡшы, йылы хистән кемгә йәки нимәгәлер ылығыу, ынтылыу. *Күңелем тартҡас, тағы ҡайттым Ямашлы буйҙарына.* М. Кәримов. **Күңел төбө** эске донъяның сит-ят күҙҙән йәшерен изге урыны. **Күңел төшөү** кемгә йәки нимәгәлер яҡынлыҡ, ихласлыҡ һиҙеү. *Егеттең егетлеге шунда: күңеле төшкәнен үҙенә ҡаратмай ҡуймай.* М. Тажи. **Күңел тулыу (*йәки* тулышыу)** илағы килеү. **Күңел уйнау** ҡоҫҡо килеү. **Күңел ултырыу** риза булып, тынысланыу. **Күңел үҫеү** нимәгәлер ҡыуаныл кәйефләнеү, дәртләнеү. *Үҫһен өсөн кеше күңеле, яҙ ҡояшы кеүек боҙҙо иретерлек йылы һүҙҙәр кәрәк түгелме.* Р. Янбулатова. **Күңел һалыу** 1) эш-шөғөлгә ихласлыҡ биреү. *Күңел һалып эшләү;* 2) иғтибар йүнәлтеү, күҙ ташлау. *Диҡҡәтеңде тарта алманым, ҡараш һалдың, күңел һалманың.* М. Кәрим. **Күңел ятыу** йөрәккә ярашлы күреү, оҡшатыу. *Күңел ятҡан эш. Күңел ятҡан кеше.* **Садә күңел(ле)** ябай кеше. *Большевиктарҙы бөтөрөргә Зәки Вәлиди үҙе сыҡҡан .. икән, тигән .. хәбәрҙәр ысынлап та совет яҡлы булған садә күңелдәрҙе лә тәшүишкә төшөргән.* Ғ. Яһудин. **Ысын күңелдән** аҫтыртын уйһыҙ, бөтә ихласлыҡ менән. *Уның [Наиләнең] ысын күңелдән яратыуын мин аңламай инем.* С. Агиш.

● *Аҡыллының теле күңелендә, аҡылһыҙҙың күңеле телендә.* Мәҡәл. *Аҫыл таш һыу төбөндә, аҫыл һүҙ күңел төбөндә.* Мәҡәл. *Күңел — быяла, бер ыуалһа уңалмаҫ.* Мәҡәл. *Күңелгә килгән алға килер.* Әйтем. *Күңел етһә, аш етә.* Әйтем. *Күргән күҙҙә ҡалыр, әйткән күңелдә ҡалыр.* Мәҡәл. *Тар күңелле һөйөнә белмәҫ.* Әйтем.

**КҮҢЕЛДӘМ** *с. диал.* Асыҡ йөҙлө; илгәҙәк.

**КҮҢЕЛДӘН** *р.* Уй менән, яҙмай ғына; эстән. *Күңелдән иҫәпләү.*

**КҮҢЕЛЛЕ** [1] *с.* **1.** Төрлө мәрәкә менән күңелде күтәрерҙәй; уйын-көлкөлө, ҡыҙыҡ. *Күңелле байрам. Күңелле кисә. Күңелле мәжлес. Күңелле булыу. // Табын күңелле үтте.* ■ *Быңдай шау-шыулы күңелле сход Айҙаҡайҙың ғүмерендә беренсе тапҡыр булғандыр.* Һ. Дәүләтшина. // Кәйефте күтәргән, ҡыуаныс-йыуаныс биргән, яҡшы. *Күңелле йыр. Күңелле хәбәр. Күмәк эшләү күңелле.* ■ *[Новиков:] Ниндәй яҡшы урын, ниндәй күңелле баҡса!* Д. Юлтый. *Ямғырҙан һуң ҡала һауаһы иркенәйеп китә. Тын алырға ла рәхәт, йөрөргә лә күңелле.* С. Агиш. / Төрлө тәьҫоратҡа, кисерештәргә бай, ҡыҙыҡлы. *Күңелле йәшлек. Күңелле сәфәр. Күңелле тормош. // Күңелле ял итеү.* ■ *Улар Балкан тауға күсеп күңелле генә йәшәй башлаған.* «Заятүләк менән Һыуһылыу».

**2.** Шат тәбиғәтле; уйынсыл. *Күңелле кеше.* ■ *[Ямал] бик күңелле саф йөрәкле ҡатын. Яҡшы йырсы.* М. Тажи. / Яҡшы кәйефте, шатлыҡты сағылдырған. // *Күңелле һөйләшеү.* ■ *Был ҡатын бөтә магазинды яңғыратып, күңелле тауыш менән көлөп ебәрҙе.* С. Агиш. *Ныязғол да был арала бик күңелле йөрөй.* Һ. Дәүләтшина.

● *Йыр күңеллегә — ҡыуаныс, күңелһеҙгә — йыуаныс.* Мәҡәл.

**КҮҢЕЛЛЕ** [2] *с.* Үҙ теләкле; ирекле. *Отрядҡа күңелле булып яҙылыу.* ■ *Алдан ҡыҙыл флаг тотҡан йөҙгә яҡын атлы күренде. Ул баҫмасылар менән көрәшеү өсөн төрөкмәндәрҙән күңелле отряд ине.* А. Таһиров.

**КҮҢЕЛЛЕК** *и.* Күңел йыуанысы, күңел йыуатырлыҡ нәмә.

● *Туй ашы туйымлыҡ түгел, күңеллек кенә.* Әйтем.

**КҮҢЕЛЛЕЛЕК** *и.* **1.** Уйын-көлкөлө, күңелле хәл. *Мин әшкә ингәндән бирле магазинда быңдай күңеллелек булғаны юҡ ине әле.* С. Агиш.

**2.** Күтәренке күңел, кәйеф яҡшылығы. *Бик кәйефле булып ҡайтҡайны. Фәхри .. Ашарға ултырғас та күңеллелеген юйманы.* Б. Бикбай.

**3.** Ҡайһы бер сифаттар менән кеше холҡондағы үҙенсәлекте белдерә. *Киң күңеллелек. Нескә*

*күңеллелек. Саф күңеллелек.* ■ *Хеҙмәткә гәмһеҙлек, хуш күңеллелектән дә зарарлы нәмә бармы һуң.* З. Биишева.

**КҮҢЕЛЛӘНДЕРЕҮ** *к.* **1.** Кәйефте күтәреү, күңелде асыу. *Эштәге уңыш халыкты ла күңеләндерә.* Б. Бикбай.

**2.** Күңелле [1] итеү. *Ҡурай кисәне күңелләндереп ебәрҙе.*

**КҮҢЕЛЛӘНЕҮ** *к.* **1.** Күңел күтәрелеү, кәйеф яҡшырыу; кәйефләнеү. *Новиков асылып, күңелләнеп .. китә. Ул һүҙ артынан һүҙ таба, көлкө артынан көлкө таба.* Д. Юлтый.

**2.** Күңеллегә әйләнеү, йәнләнеү. *Ҡыш уртаһында Рәмзиәгә ярҙамға Тутыя тигән ҡыҙҙы бирҙеләр. Эш тағы ла күңелләнеп китте.* «Ағиҙел», 1960, № 8.

**КҮҢЕЛНАМӘ** *и. иҫк.* Иҫтәлек дәфтәре.

**КҮҢЕЛСӘК** *с.* **1.** Шат күңелле, шат тәбиғәтле. *Күңелсәк кеше.* ■ *Ут йотоп ҡайтһа ла күңелсәк күренергә тырышты Кашапов.* Я. Вәлиев.

**2.** Яҡшы күңелле, кешелекле. *Ул [Фирҙәүес] .. бик тәбиғи ҙә, иркә лә, ләкин эскерһеҙ күңелсәк тә ине.* Ғ. Шафиҡов. *[Хажи бабай:] Шаһи әнем, һин ауыл советы председателе булған саҡта бик гәҙел, күңелсәк булдың. Бөтәбеҙ ҙә һине яраттыҡ.* «Башҡортостан батырҙары», 1959.

**3.** Нескә хисле, хискә тиҙ бирелеүсән; йомшаҡ күңелле. *Күңелсән кеше илап барыусан.*

● *Күңелсәк күңеле менән көн күрә.* Мәҡәл.

**КҮҢЕЛСӘКЛӘНЕҮ** *к.* Кәйеф яҡшырыу. *Миңһылыу еңгә күңелсәкләнеп китте лә үҙе лә берҙе эсеп ебәрҙе.* Р. Солтангәрәев.

**КҮҢЕЛҺЕҘ** *с.* **1.** Тәьҫир итерлек ҡыҙығы булмаған, ялҡытҡыс бер төрлө. *Күңелһеҙ кисә. Күңелһеҙ китап. Күңелһеҙ тәбиғәт күренеше.* // *Дәрес күңелһеҙ үтте.* ■ *Минең өсөн мәжлес артыҡ күңелһеҙ булды.* Д. Юлтый. *Күңелһеҙ тойолдо быларҙың һөйләшеүе.* С. Агиш. / Кәйефте ҡырған, бошондорғос; насар. *Күңелһеҙ хәбәр. Күңелһеҙ уйҙарға бирелеү.* ■ *Оҙаҡ ваҡытҡа айырылышыу бик күңелһеҙ ине.* Һ. Дәүләтшина. / Шатлығы, ҡыуанысы аҙ булған, ауыр тәьҫир ҡалдырған. *Күңелһеҙ көн. Күңелһеҙ тормош.* ■ *Һис уфтанма, күңелһеҙ булды, тип ғүмерем башы.* Ш. Бабич.

**2.** Күңеле бойоҡ; кәйефһеҙ. *Күңелһеҙ кеше.* // *Күңелһеҙ йөрөү.* ■ *Сөңгәт бөгөн ауырыған кеше кеүек күңелһеҙ ине.* Ғ. Дәүләтшин. / Кәйефтең насарлығын, бойоҡлоҡто сағылдырған. *Күңелһеҙ сырай. Күңелһеҙ тауыш.*

● *Күңелһеҙгә күлдәк кейҙермәйҙәр.* Мәҡәл.

**КҮҢЕЛҺЕҘЛЕК** *и.* **1.** Ҡыҙығы булмаған, күңелһеҙ хәл. *Эс бошорғос күңелһеҙлек.*

**2.** Ауыр тәьҫир иткән, ауырлыҡ килтергән эш-хәл. *Мөлөк ағай уйлай-уйлай башы ҡаңғырып китте; юлында бынауындай уңайһыҙлыҡ, күңелһеҙлек осраған, асыуы ла килде.* Т. Хәйбуллин.

**3.** Күңел һүренкелеге, кәйефһеҙлек. *Күңелһеҙлеккә бирелеү.*

**КҮҢЕЛҺЕҘЛӘНДЕРЕҮ** *к.* **1.** Кәйефте төшөрөү.

**2.** Күңелһеҙ итеү, ҡыҙыҡһыҙ итеү.

**КҮҢЕЛҺЕҘЛӘНЕҮ** *к.* **1.** Кәйеф ҡырылыу; бойоҡланыу. *Күңелһеҙләнеп йөрөү.* ■ *Егет бик күңелһеҙләнеп кенә теге ҡыҙ янына барған* (Әкиәттән).

**2.** Күңелһеҙ, ҡыҙыҡһыҙ, йәмһеҙгә әйләнеү. *Болот киҫәге ҡояшты ҡапланы, тирә-яҡ күңелһеҙләнде, көн һалҡынайып киткәндәй булды.* Ә. Байрамов.

**КҮҢЕЛҺЕНЕҮ** *к.* **1.** *ҡар.* **күңелләнеү** 1. *[Ямал — ҡыҙҙарға:] Янсыҡ, яулыҡ-маҙар биреп ҡыуандырыр кәрәк ине. Шулай итһәң, улар [егеттәр] албырғап, күңелһенеп, һәр ваҡыт дәртләнеп йөрөрҙәр ине.* Н. Ҡәрип.

**2.** Күңелгә ятыу, оҡшатыу. *Ҡарамаҡҡа ямаҡ булғас, ул атты күңелһенмәйем.*

**КҮҢЕЛҺЕТЕҮ** *к. диал. ҡар.* **күңелләндереү** 1.

**КҮҢЕЛҺЕҮ** *с. диал. ҡар.* **күңелһеҙ** 1. *Мин яңғыҙмын. Йәтимлектә көндәр күңелһеү.* Ғ. Амантай.

**КҮҢЛЕК** *и.* Күң булып таҫланып ятҡан иҫке тиреҫ өйөмө.

**КҮҢРӘ** *и. диал.* Биттәге тут.

**КҮҢӘҘӘК** *и.* Ҡымыҙ көбөһө эсендә барлыҡҡа килгән күк; үңәҙ.

**КҮП** *р.* **1.** Һаны, күләме ғәҙәттәгенән артыҡ; ҙур һанда, ҙур күләмдә. *Күп биреү. Күп итеп алыу. Күп йөрөү. Күп уйлау. Күп һөйләү.* ■ *Күп тә китмәнем «Салих!» — тип ҡысҡырған тауыш ишеттем.* С. Агиш. *Эшсене күп иҙҙеләр .. фирғәүендәр ҡарундар.* Ш. Бабич. *Бер байҙың малы күп икән, ҡуйыр урыны юҡ икән* (Әкиәттән). / Ваҡыт иҫәбе байтаҡ, оҙаҡ. *Күп йәшәү. Күп үтеү.* ■ *[Имай:] Ҡарағыҙ, яҡшы уҡығыҙ. Имтиханға күп ҡалмаҡы.* Һ. Дәүләтшина. *Күп тә тормаҫтан Аҡбулат ҡарт үлеп киткән* (Әкиәттән).

**2.** *с. мәғ.* Һан иҫәбе, күләме яғынан ишле булған, байтаҡ һандағы; *киреһе* аҙ. *Күп кеше. Күп мал. Күп эш. Иҫәпһеҙ күп халыҡ. Күп милләтле ил. Күп мәғәнәле һүҙ. Күп ҡырлы мөйөш.* // *Күпте белеү. Күпкә етеү.* ■ *Хәбәрем бар күп ерҙәрҙән, батыр ҙа батыр ирҙәрҙән.* Салауат Юлаев. *[Айыуголаҡ] бик күп юлдар үткәс уға бер һыйыр көтөүсеһе осраны, ти* (Әкиәттән). *Нимә булған уға, Юламан ҡартҡа?.. Кемдәр менән серләшә уның күпте кисергән тынғыһыҙ күңеле?* З. Биишева. *[Ҡатын:] Минең ҡыҙым бөгөн .. ун етегә китә. Һеҙҙең дә күбегеҙҙең йәше шул сама.* С. Агиш. / Ваҡыт иҫәбе байтаҡ булған. *Күп ғүмер.* ■ *Беҙҙең сменаға ла күп ваҡыт ҡалмағайны инде.* Т. Йәнәби. *Бынан күп йыл элек Урал аша, бер поезда китеп барабыҙ.* Ғ. Сәләм.

◆ **Күп булһа** *инш.* күп тигәндә, уҙа барһа. *[Новиков:] Әллә барып ҡайтабыҙмы? Күп булһа илле саҡырым юл [булыр].* Д. Юлтый. **Күп йыллыҡ** бер нисә йәки оҙаҡ йылдар үҫә торған (үҫемлектәргә ҡарата). **Күп күреү** артыҡҡа һанау; тарһыныу. **Күп нөктә** *ҡар.* **нөктә. Күпте күреү** төрлө ауыр хәлдәрҙе баштан үткәреү. *Башҡынайым минең күпте күрҙе. Дошмандарға булһын яҙығы* (Халыҡ йырынан). **Күптән (***йәки* **күптин күп)** бик күп. *Күптин күп сәләм.* ■ *[Батыр] бер ап-аҡ тирмә күрҙе, малы күптән күп, ти.* М. Ҡулаев.

**КҮПБЫУЫН** *и. мат.* Бер нисә быуындың сум-

маһын йәки айырмаһын белдергән алгебраик аңлатма.

**КҮПЕР** *и.* Йылға, соҡор йәки башҡа бер ҡаршылыҡ аша сығыу өсөн һалынған ҡоролма. *Ағас күпер. Таш күпер. Аҫылмалы күпер. Понтон күпер. Селтәрле күпер. Йылға күпере. Тимер юл күпере. Күпер аҫты. Күпер ауыҙы. Күпер һалыу.* ■ *Ҡуҙыйкүрпәс атаһының көмөш көҙгөһөн ташлап ебәргәйне.., диңгеҙ аша бөгөлөп һығылып торған быяла күпер һалынды, ти.* «Ҡуҙыйкүрпәс менән Маянһылыу». / *күсм.* Ике араны тоташтырған юл. *Иҫкелеккә ҡаршы көрәшәбеҙ, яңылыҡҡа күпер һалабыҙ.* М. Хәй.

♦ **Күпер булыу** төрлө нәмә өҫтө-өҫтөнә өйөлөп, туҙып ятыу. *Урын күпер кеүек булып ята, йыйыштырылмаған.* **Ҡыл күпер** *шул уҡ* **сират күпере** (*ҡар.* **сират** [2]). **Салауат күпере** *ҡар.* **йәйғор.**

**КҮПЕРЕК** *и.* **1.** Шыйыҡлыҡ өҫтөндә өрөлөп барлыҡҡа килгән һауа ҡыуыҡсаларынан торған аҡ масса; күбек. *Тулҡын күпереге. Һөт күпереге. Һабын күпереге.*

**2.** *һөйл. ҡар.* **күбек** 3. *Мөхәмәтулла бабай сананан бесән алып, атының тирен, күпереген һыпырҙы.* Ә. Вахитов.

**КҮПЕРЕЛЕҮ** *к. ҡар.* **күпереү.**

**КҮПЕРЕНКЕ** *с.* Күпереп, ҡабарып торған. *Күперенке мендәр. Күперенке сәс.*

**КҮПЕРЕҮ** *к.* **1.** Ваҡ-ваҡ ҡына булып ҡыуыҡланып өрөлөү (шыйыҡлыҡҡа ҡарата). *Бер ҡола бейә .. рәхәтләнеп колонон имеҙеп тора. Ҡолондоң ауыҙ ситенә һөт күпереп сыҡҡан.* Ш. Шәһәр.

**2.** Ҡабарып күтәрелеү (йомшаҡ, кәүшәк нәмәләргә ҡарата). *Күпереп ятҡан бесән. Күпереп торған мендәр.* ■ *Үҙем матур булмаһам да сәстәрем .. күпереп, ебәк кеүек елпелдәп тора.* М. Садыкова. / Тулышып ҡабарыу. *Күпереп торған ирен.* ■ *Гөлбикә күпереп торған йомшаҡ ҡына ҡоймаҡ бешергән* (Әкиәттән). / *күсм.* Йомшаҡ булыу, көрпөлдәп тороу (тупраҡҡа, ергә ҡарата). *Күпереп ятҡан ҡара тупраҡлы баҫыуҙарҙа иген дә емерелеп үҫә.* «Совет Башҡортостаны», 1965, 28 октябрь.

**3.** Хәл ҡылымдың *-п* формаһында төп ҡылымға эйәреп «күп, мул булып, бик шәп» мәғәнәһен бирә (үҫкән үҫемлеккә ҡарата әйтелә). *Күпереп үҫкән ашлыҡ. Күпереп сәскә атыу.* ■ *Унда йәм-йәшел бәпкә үләне күпереп үҫә.* Ғ. Ибраһимов.

**КҮПЕРЛӘҮ** *к. диал.* Һиңкелдәү (торфлы, һаҙмат ерҙәге юлға ҡарата). *Юл күперләп ята.*

**КҮПЕРТЕҮ** *к.* **1.** Тулғандырып күбекле итеү, күбеккә әйләндереү. *Бәгиҙә тубығынан һыуға ингән дә, еҫле һабынды күпертеп, битен йыуа.* Ш. Янбаев.

**2.** Ҡағып-һуғып ҡабартыу, ҡабарынҡы хәлгә килтереү. *Мендәрҙе күпертеү.* ■ *[Малайҙар] ҡыуыш эсенә лә күпертеп хуш еҫле бесән түшәнеләр.* Ф. Иҫәнғолов.

**3.** *күсм.* Арттырыу, шаштырыу (һөйләгәндә). *Күпертеп һөйләү.*

♦ **Күпертеп сигеү** (*йәки* **һырыу**) элмәктәрен өҫкә сығарып, ырғаҡ менән сигеү.

**КҮПЕРТКЕ** *и.* **1.** Тырнаҡ аҫтына сыҡҡан эренле шешек. *Күпертке сыҡҡан.* **Күпертке ашау** күпертке сығып, эренләп, уңалмай йөрөү.

**2.** Һыулап ыуғанда күперә торған ҡыҙыл сәскә; һабын үләне, оҙанҡаш.

**3.** *ҡар.* **күберсек** 1.

**КҮПЕРТКЕЛӘҮ** *к.* Күпертке (1 мәғ.) сығыу.

**КҮПЕРТМӘ** [1] *с.* Күпертеп, ҡабартып ҡуйылған. *Аҡлы ситса күлдәгемдең иң остары күпертмә* (Халыҡ йырынан).

**КҮПЕРТМӘ** [2] *и. ҡар.* **күберсек** 1.

**КҮПЕРҮК** *и. иҫк. кит. ҡар.* **күпер** 1.

**КҮПКӘ** *р.* Оҙаҡҡа, оҙаҡ ваҡытҡа. *Күпкә китеү. Күпкә түҙеү. Тынлыҡ күпкә барманы.* ■ *[Шәрәф Тимергә:] Күпкә ебәрҙеләрме һуң һине?* Б. Бикбай.

**КҮПКӘК** [1] *с.* Күбеп торған (ҙур эскә ҡарата). / *мыҫҡ.* Ҙур эсле, күпкән ҡорһаҡлы. *Ҡыҫҡа муйынлы күпкәк ҡара бейәнең йүкә нуҡтаһын Ибрай менән Әсғәт ике яҡтан тотоп алған.* М. Кәрим. // *Өлкәман күпкәк менән нисек һөйләшергә [Айрас] белер инеІ* Ш. Насыров.

**КҮПКӘК** [2] *и.* Һыйыр малының эсен күптерә торған ауырыу. *[Баҙлый бабай] күпкәк булған быҙауҙарҙы ла .. ҡорсаңғы аттарҙы ла рәткә индерә.* Б. Бикбай.

**КҮПҠЫР** *и. мат.* Яҫы күпмөйөштәрҙән торған геометрик есем. *Төҙөк күпҡыр.*

**КҮПЛЕК** *и.* **1.** Күп булғанлыҡ. *Һис тә зарланмайым яҙмышыма, әйелеүем емеш күплектә.* Ш. Бикҡол.

**2.** *грам.* Кем йәки нимәнеңдер ике йәки унан артыҡ булыуын күрһәткән грамматик категория. *Күплек ялғауы. Күплек һаны.* ■ *Башҡорт телендә фәҡәт берлектә йәки күплектә генә ҡулланылған исемдәр юҡ.* Ж. Кейекбаев.

**КҮПЛӘП** *р.* Күп итеп, күп һанда. *Күпләп алыу. Күпләп ташыу. Күпләп эшләү.* ■ *Баҡсабыҙ, үткәндә ҡыҙҙар, хуш-еҫен күпләп сәсә.* Ш. Бабич.

**КҮПМЕ** *һор. а.* **1.** Ниҙеңдер һан-иҫәбен, күләмен һорағанда әйтелә; ни саҡлы? *Күпме булды? Күпме сыҡты?* ■ *[Миңһылыу:] Ҡасан килгәйнең, ниңә кермәнең беҙгә? Күпмегә килдең?* Р. Солтангәрәев. *Эй, ағаҫкай, йәшең күпме, түгелгән емешең күпме?* (Мөнәжәттән). / Нәмәнең хаҡын һорағанда әйтелә; ни хаҡ?, ни хаҡҡа? *Күпмегә алдың? Күпме һорайһың? Күлдәгең күпмелек?*

**2.** Билдәһеҙ һан, күләм, ваҡытҡа ҡарата әйтелә; ни саҡлы?, ни хәтле? *Айырылыуға күпме ваҡыт үткән, нисә әле? Өсмө, дүртме йыл.* Ғ. Сәләм. *[Ҡарт:] Күпмегә хәтле мин уны тотоп, тыйып тора алам һуң?* З. Биишева. / Ниҙеңдер күплегенә баҫым яһағанда әйтелә; ни тикле. *Донъяла күпме халыҡ бар, күпме тел бар донъяла. Р. Ниғмәти. Күпме гәйрәт, ашҡыныу, дәрт, күпме моң, йыр, теләк.. һыйҙыра ала йөрәк.* Ғ. Әмири.

**3.** *р. мәғ.* Эш-хәлдәң дауамы, күләме билдәле йәки сикле булмағанда әйтелә. *Күпме йөрөһәң дә була.* ■ *Күпме ултырғандыр Байназар, үҙе хәтерләмәй.* Б. Бикбай. / Эш-хәлдең дауамлы, көсөргәнешле булыуын белдергәндә әйтелә; ни саҡлы, ни тиклем. *[Бибизата ҡарсыҡ:] Күпме хыялландым. Иншалла, теләгем ҡабул булды:*

*улымды хәләл мал менән башка сыгарҙым.* Т. Ғарипова. *Күпме кыскырһам да яуап килтермәҫтәр тулкындар. Ахырыһы .. беҙҙең арабыҙга инеп ятты километрҙар.* Ғ. Сәләм.

♦ **Күпме кәрәк** нимәнеңдер тәьҫир көсөн кесерәйтеп күрһәткәндә әйтелә. *Сабый балага күпме кәрәк — ел тейгәндер.* ■ *Кешегә күпме кәрәк инде, һыйың, йылы һүҙең булһа, шул баштан ашкан.* Б. Бикбай. **Күпме генә** 1) һап, күләмде кесерәйтеп, кәмһеткән һымаҡ итеп күрһәткәндә әйтелә. *Һөнәрһеҙ кеше күпме генә акса ала инде;* 2) кире һөйләм составында ҡулланылып, ҡаршы ҡуйыу мәғәнәһен көсәйтә; нисек кенә, ни саҡлы. *Заятүләк күҙҙәрен тултырып күпме генә караһа ла, Һыуһылыу уны күрмәй.* «Заятүләк менән Һыуһылыу».

● *Бакырҙы күпме агартһаң да көмөш булмаҫ.* Мәҡәл.

**КҮПМЕЛЕР** *билдһ. а.* Иҫәп-һанды, күләм-дәрәжәне сама менән әйткәндә ҡулланыла. *Күпмелер вакыт үткәс. Күпмелер эшләгәндән һуң.* ■ *Шулай тагы күпмелер йыл үтә. Ике күрше дуҫ татыу ғүмер итә.* З. Биишева.

**КҮПМӨЙӨШ** *и. мат.* Мөйөшө дүрттән артыҡ булған геометрик есем. *Төҙөк булмаган күпмөйөш. Йондоҙ һымак күпмөйөш.*

**КҮПМӘ** *и.* Ҡаҙ мамығы тултырып яһаған түшәк. *Аҫка күпмә һалыу. Күпмә түшәү.*

**КҮПМӘК** *и. диал.* Ҡоймаҡ.

**КҮПМӘС** *и.* Сепаратор камфоркаһы эсендәге ҡалҡыуыс.

**КҮПСЕК** [1] *и.* **1.** Бәләкәй генә йомшаҡ мендәр. *Түбәндән ултыра торган кешеләр өсөн балаҫ өҫтөнә дүрт-биш күпсек ташланган.* Ш. Шәһәр. / Күн тышлы бәләкәй эйәр мендәре. *Ҡуҙыйкүрпәс .. аҫтына серге түшәп; башы аҫтына күпсек һалып, татлы йокога сума.* «Ҡуҙыйкүрпәс менән Маянһылыу».

**2.** *диал. кар.* **күпмә** 1.

**КҮПСЕК** [2] *с.* Нык әсеп, бызырлап, ҡабарып сыҡҡан. *Күпсек катык.*

**КҮПСЕЛЕК** *с.* Һан яғынан өҫтөнлөк иткән яҡ, өлөш. *Күпселек менән хәл итеү. Күпселек тарафынан кабул ителеү. // Күпселек хужалык.* ■ *Кульъяҙмаларҙың күпселегә беҙҙең көндәргә килеп етмәгән.* Ә. Харисов. *Шагирҙың күпселек поэмалары ошо темага [Октябрь темаһына] арналгандар.* Ғ. Әмири. *Зал тулы кыҙҙар, егеттәр. Күпселеге минән оло.* С. Агиш.

● *Күпселек кайҙа — көс шунда.* Мәҡәл.

**КҮПСЕЛЕКТӘ** *р.* Күберәк ваҡыт, күп осраҡта.

**КҮПСЕТЕҮ** *к.* **1.** Үтә нык әсетеү, бызырлатҡанса әсетеү. *Катыкты күпсетеү.*

**2.** Ҡабартыу, күпертеү. *[Һукыр сыскан] дымлы кара тупракты калкытып, күпсетеп, яңы гына үтеп киткән.* Н. Мусин.

♦ **Талағын күпсетеү** туҡмау, кәрәген биреү. *Сура, Сура, Сураман, түрә түгел, карамын, .. осраган бер дошмандың күпсетәмен талагын* (Ҡобайырҙан).

**КҮПСЕҮ** *к.* **1.** Үтә нык әсеп, бызырлап күпереү. *Күпсегән катык. Күпсегән эркет.* ■ *Иҫкергән һабала кымыҙ күпсей, какһыган тәм сыгып боҙола.* М. Ғөбәйҙуллин.

**2.** Ҡабарып ҡалҡыу, күпереү. *Матур гына, ыксым гына ак мендәрҙәр корһактары күпсеп ята.* Ғ. Дәүләтшин. / Артылыу, ташыу. *Яҙгы һыуҙан күпсеп яткан киң Днепрҙы кисеп сыктык.* «Ағиҙел», 1969, № 10. / *күсм.* Йомшаҡ булып, көрпөлдәү. *Тиреҫ һалганғалыр инде, ер күпсеп ята.*

**3.** Шыйыҡлыҡтың өҫтөнә ҡалҡыу, ҡабарып йөҙөп йөрөү (шыйыҡлыҡ өҫтөндәге нәмәләргә ҡарата). *Яҙгы ташкында бер мулла яңылыш һыуга төшкән дә, сапаны күпсеп тарбаңлап агып бара, ти.* Ғ. Амантай.

**4.** *диал. кар.* **күпереү** 3. *Һыу буйында үлән күпсеп үҫкән.*

♦ **Эс күпсеү** *диал.* эс көтәрләү (*кар.* **эс**).

**КҮПТЕРЕҮ** *к.* Ҡабартып өрөлдөрөү. *Эсте күптереү.*

**КҮПТЕРМӘ** *и.* **1.** Тары йәки борсаҡ ононан бешергән ҡоймаҡ. *Борсак күптермәһе.* ■ *Сәлимә уның [Ҡасимдың] алдына бер сеүәтә кымыҙ менән ике киҫәк тары күптермәһе ҡуйҙы.* Ф. Иҫәнғолов.

**2.** *диал.* Әсе йәймә; ҡабартма.

**КҮПТӘН** *р.* **1.** Күп ваҡыттар элек; күп элек. *Күптән таныш булыу.* ■ *[Хисбулла:] Күптән, күптән булган булган вакига был. Ул сакта әле беҙҙең ата-бабаларыбыҙ кусмә тормошта йәшәгән.* З. Биишева. / Берәй эште ҡеүәтләгәндә әйтелә. *Күптән кәрәк ине.* ■ *[Кыҙрас:] Күптән шулай тип әйтергә кәрәк ине* (Әкиәттән).

**2.** Әллә ҡасандан бирле. *Күптән уйлап йөрөгән уй.* ■ *Мәскәүҙән килә торган тауарҙар күптән метр менән киләләр. Беҙ генә аршин менән эш итәбеҙ.* С. Агиш. **Күптән бире (йәки бирле)** күп ваҡыттан бире. **Күптән түгел** яңыраҡ. *Күптән түгел... бер курортта ял иттем мин.* Ғ. Сәләм.

**3.** Бер үк эш-хәрәкәтте ике шартта сағыштырып, һуңғыһын көсәйткәндә ҡулланыла; бигерәк тә. *Ерһеҙ ярлы крәҫтиән капиталист артынан китмәй. Һугыштан туйган һалдат күптән .. китмәй.* Д. Юлтый.

♦ **Күптән үткән заман** *грам.* үткән заман ҡылым формаһының бер төрө.

**КҮПТӘНГЕ** *с.* **1.** Бик күп ваҡыт элек булған; әллә ҡасанғы. *Күптәнге эш.* ■ *Хәтеремдә күптәнге яҙ: ялан тәпәй малай инем, .. бер кыҙ юлыма тап булды минең.* Н. Нәжми.

**2.** Әллә ҡасандан килгән оҙаҡ дауам иткән; элекке, иҫке. *Күптәнге таныш.* ■ *Йәнәби менән Шәнәби күптәнге дуҫтар.* М. Кәримов. *[Әбйәлилдең] менеп йөрөргә берәй якшы атың булһын ине тигән, күптәнге теләге бар икән* (Әкиәттән).

**КҮПТӘНӘН** *р. диал.* Күптән.

**КҮПҺЕНЕҮ** *к.* **1.** Кемдәндер нимәнелер ҡыҙғаныу, артыҡ була тип, бирергә йәки булдырырға теләмәү; күп күреү, күпкә һанау. *[Хәбибулла бай] магазины тулы мал була тороп, бер кулдәкте күпһенә башлаган.* М. Ғафури. *Ахыры байҙар шуны ла күпһенделәр: айырҙылар һөйгән иренән.* Х. Ҡунаҡбай.

**2.** Артыҡ һанау; тарһыныу. *Күпһенмәгеҙ, күп тормамын, мин бында кунак кына* (Халыҡ йырынан).

**КҮПӘТӘЙ** *и. диал. кар.* **күтәрем** 2.

**КҮПӘТӘЙЛӘҮ** *к. диал.* Күтәремләү.

**КҮРГЕЛӘҮ** *к.* Һирәк-һаяҡ осратыу, ваҡыт-ваҡыт күреү.

**КҮРГӘҘМӘ** [1] *и.* Тамаша өсөн ҡуйылған төрлө нәмәләр һәм шул нәмәләр торған урын. *Ауыл хужалығы күргәҙмәһе. Китап күргәҙмәһе. Күргәҙмә ойоштороу.* ■ *Колхоз Шәйхулла бабайҙы Мәскәүгә күргәҙмәгә ебәргәйне. Унда уны медаль һәм мотоцикл менән бүләкләнеләр.* М. Садыкова.

**КҮРГӘҘМӘ** [2] *с.* **1.** Күрһәтеү өсөн тәғәйенләнгән. *Күргәҙмә әсбаптар.*

**2.** Күрһәтеүгә, тамашаға нигеҙләнгән. *Күргәҙмә агитация. Күргәҙмә йәрминкә.*

**КҮРГӘН-БЕЛГӘН** *с.* Күреп йөрөгән, белгән таныш. *Күргән-белгән кешем түгел. // Күргән-белгәндәрҙән һорашыу.* ■ *Кеше яҡшылыҡты онотмай, уны йыр итеп йырлай, күргән-белгәндәренә һөйләй.* Ә. Вахитов.

**КҮРЕК** *и.* **1.** Утҡа һауа өрҙөрә торған ҡулайлама. *Тимерсе күреге. Төтәткес күреге.* ■ *Күрек янында Рафиҡ ағайҙың 16 йәшлек улы Ғилфан тора. Ул күрек өрҙөрөп тимерҙе ҡыҙҙыра.* Ш. Шәһәр.

**2.** Гармундың һуҙылмалы һырлы өлөшө. *Байназар .. сыңғыратып, гармун күреген өҙә тартып уйнап ебәрҙе.* Б. Бикбай.

**3.** *диал.* Төтәткес.

**КҮРЕКЛӘНЕҮ** *к.* Күрек һымаҡ һырлы-һырлы булыу. *[Саша] елкәһенә ҡара шинель һалған, ҡунысы күрекләнеп торған итек кейгән.* Х. Ғиләжев.

**КҮРЕКЛӘҮ** *к.* Күрек йәки шуның кеүек башҡа нәмә менән өрҙөрөү. *Иҫке итек ҡунысы менән күрекләгәс, [самауыр] оҙон итеп сайылдап тын алды ла шыжларға тотонлдо.* Д. Бүләков.

**КҮРЕЛЕҮ** *к. төш. ҡар.* **күреү** 2—4, 6, 8. *Йәндәй күрелгән нәмә. Сара күрелде. Хуп күрелде.* ■ *Йомарт тотондо, тарауат ҡыланды Боғара. Тик быға үкенәһе юҡ.. Халыҡтың күңеле күрелде.* Ә. Хәкимов.

**КҮРЕЛМӘГӘН** *с.* Бер ваҡытта ла булмаған. *Тәүҙә Деникин, унан һуң Врангель бандалары килде.. Ҡырым тарихында күрелмәгән вәхшәттәр башланды.* И. Насыри.

**КҮРЕМ** [1] *и.* Балаяҡтылыҡтан ай һайын килгән ҡан һәм шул ҡандың килеү мәле; айлыҡ, менструация. **Күремдән ҡалыу** күрем күрмәй башлау; ырыуҙан ҡалыу. **Күрем күреү** күрем мәлен кисереү.

**КҮРЕМ** [2]: **күҙ күреме** күҙ күрә алған, күҙ еткән алыҫлыҡ. *Күҙ күремдән күренеп.., күгәреп ятҡан Урал тау* (Ҡобайырҙан). *Ҡараңғылыҡ беҙҙе .. ҡыҫып килә. Торған һайын күҙ күреме тарая бара.* Ф. Исәнғолов. **Күҙ күреме етеү** ҡарап күрә алыу, күҙ менән иңләү. *Күҙ күреме еткән ер.* ■ *Күҙ күреме етмәй күреп — ниндәй киң һин, Тыуған ил!* Я. Ҡолмой.

**КҮРЕМЕС: ек күремесе** артыҡ күрелгән һөйкөмһөҙ кеше. *Ек күремесе булыу.*

**КҮРЕМСЕ** *и. диал.* Күрәҙә.

**КҮРЕНГЕЛӘҮ** *к.* Һирәк-һаяҡ күренеү, ваҡыт-ваҡыт күренеп ҡуйыу. *Килеп-китеп, күренгеләп йөрөү. Врачҡа күренгеләү.* ■ *«Башҡортостан хәбәрҙәре» газетаһында башҡортса мәҡәлә һәм шиғыр парсалары күренгеләй башланы.* Д. Юлтый.

**КҮРЕНЕКЛЕ** *с.* **1.** Күҙгә күренеп, иғтибарҙы тартып торған. *Фазлый Әхмәровтың өйөн Гәрәй тиҙ тапты. Николаевский урамының күренекле урынында ултырған .. ул өйҙө эҙләп тораһы юҡ ине.* Б. Бикбай.

**2.** Халыҡҡа танылған; билдәле, мәшһүр. *Күренекле революционер. Күренекле яҙыусы.*

**КҮРЕНЕС** *и.* **1.** Кейәү йәки килендең яңы туғандар менән танышҡанда биргән бүләге. *Күренес сапаны. Күренес биреү. Күренес һалып күрешеү.* ■ *Килен төшә. Бөтә ауыл ҡатын-ҡыҙын сәйгә саҡырып, уның күренесен күрһәтәләр, бүләктәрен тараталар.* «Совет Башҡортостаны», 1968, 24 ғинуар.

**2.** *диал.* Йәш баланы тәү күргәндә һалған бүләк; бәпес бүләге.

**КҮРЕНЕҮ** *к.* **1.** Күҙ алдында булып, күҙгә эләгеү, күҙгә ташланыу. *Асыҡ күренеү. Алыҫтан күренеү. Күренеп ятыу. Кеше күҙенә күренмәгән нәмә.* ■ *Ас тәҙрәң, күтәр пәрҙәң, нурлы йөҙөң күренһен* (Халыҡ йырынан). / Күҙ алдында пәйҙә булыу, барлыҡҡа килеү. *Күҙгә уттар күренде.* ■ *Кулдәктә ҡан күренде. Ҡараһам, түш буй-буй һыҙырылған.* Д. Юлтый.

**2.** Кемдеңдер алдына килеү, күҙенә салыныу. *Күренмәй йөрөү.* ■ *[Батша:] Көрәштә еңеп сығып, ҡыҙымдың исеме яҙылған ҡулъяулыҡты алған батыр миңә килеп күренгәне юҡ әле* (Әкиәттән).

**3.** Һаулығыңды тикшертеү өсөн үҙеңде күрһәтеү; ҡаралыу. *Врачҡа күренеү.*

**4.** Ҡарағандан уҡ беленеү, һиҙелеү. *[Фатиманың] етеҙ хәрәкәтендә кейем-һалымында бөхтәлек, уңғанлыҡ күренеп тора ине* Б. Бикбай. / Ҡарамаҡҡа йәки күңелгә нисектер тойолоу. *Алыҫ булып күренеү. Йәш булып күренеү. Ҡыҙыҡ күренеү. Танһыҡ күренеү. Тейеш күренеү. Уҫал күренеү.* ■ *Миңлекамалдың эсе бошто. Өйөндә ниҙер етмәгән һымаҡ күренде.* Я. Хамматов. *Донъя ауырлығы еңел күренә, арыҫландай сабыр ир булһа* (Халыҡ йырынан).

◆ **Күҙгә күренеп** күҙ алдында; һиҙелеп. *Күҙгә күренеп үҫеү. Тормош күҙгә күренеп яҡшыра.* **Күҙгә күренеү** 1) күҙгә ташланыу; һиҙелеү. *Күҙгә күренеп торған етешһеҙлектәр. Күҙгә күренерлек эш;* 2) күҙ алдында һүрәтләнеү, бар булып тойолоу.— *Бәй-й,— тине ул [Олонбикә еңгә] мине күреп,— күҙемә күренәме әллә был Зариф? Ҡайҙан килеп сыҡтың?* Ғ. Ғүмәр. **Күҙемә күренмә** асыуланып ҡыуғанда әйтелә.

● *Күренмәгән түңгәк сана ауҙарыр.* Мәҡәл.

**КҮРЕНЕШ** [1] *и.* **1.** Күҙ алдындағы тамаша. *Зәлифә тәбиғәттең иркә, саф һауаһы, матур күренештәре аҫтында күҙҙәрен алыҫҡа .. төбәгән дә тәрән уй эсендә бара.* Ғ. Дәүләтшин. *Беҙҙең алда мөһабәт күренеш асылды.* Ә. Вахитов.

**2.** Бөтә булған ҡиәфәт, төҫ-баш. *[Егеттәрҙең] тышҡы күренеше һәр кемде шикләндерерлек булғанға күрә, фатир бирергә шөбһәләнәләр ине.* М. Ғафури.

**3.** Тәбиғәттә һәм донъяла була торған төрлө хәл, ваҡиға, осраҡ һ. б. *Тарихи күренештәр.*

*Физик күренештәр. Химик күренештәр.* ■ *Совет осорона тиклем башҡорт бейеүҙәре береһе лә хореографик күренеш булараҡ яҙып алынмаған.* Ә. Харисов. *Журналда юристарҙың кәңәштәре йыш бирелә. Был якшы күренеш.* «Башҡортостан ҡыҙы», 1986, № 1.

**4.** Сәхнә әҫәренең бер бүлеге. *Дүрт күренештән торған пьеса.* ■ *Спектакль ҡуйылышы яғынан оригиналь. Бында күренештәр алмашыныуы .. сәхнә мөмкинлектәрен оҫта файҙаланыу нигеҙендә алып барыла.* Р. Солтангәрәев.

**КҮРЕНЕШ**[2] *и. кар.* **күренес.**

**КҮРЕП** [*рус.* короб] *и. диал.* **1.** Ситән һауыт, алап.

**2.** Шул нәмә ултыртылған сана йәки арба.

**КҮР-ЕР** *с. диал.* Ваҡ-төйәк, йөк-бар. *Күр-ер нәмә.*

♦ **Күр-ер итеү** улай-былай итеп, нисек тә эмәлен табыу. *Күр-ер итеп малды ҡыш сығарыу.*

**КҮРЕҮ** *ҡ.* **1.** Күҙ менән ҡабул итергә һәләтле булыу. *Күрмәй башлау. Якшы күреү.* ■ *Акмырҙа күҙ дарыуын атаһының күҙенә тамыҙған. Атаһы һин дә мин күрә башлаған* (Әкиәттән).

**2.** Күҙ менән ҡабул итеү, күҙгә алыу. *Алыҫтан күреү. Күрә-күрә барыу.* ■ *Таш урамда ятҡан.., туҙан баҫҡан икмәк һыныгын күрҙем дә мин, һүҙһеҙ ҡаушап ҡалдым, әрнеү баҫты күңел тынлыгын.* Я. Ҡолмой. *Ултырсы ла сәсең бер үрәйем, торсо, һары сәс, буйың күрәйем* (Халыҡ йырынан). / Ҡарап аңлау, һиҙеү, төшөнөү. *Кем икәнен күреү. Уҫаллыгын күреү.* ■ *Сәгиҙә балаларҙың .. бер аҙ тартынып, ятһынып ултыргандарын күргәс, беренсе дәресте нисек кенә булһа ла йәнлерәк итеп үткәрергә тырышты.* М. Тажи.

**3.** Тамаша итеү, ҡарау. *Күргән фильм.* ■ *Күрәм: эшкә тора республикам, һөрән һалды бына гудоктар, эшсе өйҙәр ҡояшка ҡаратып тәҙрә асты..* Ғ. Сәләм. / Тап килтереү, осратыу. *Күреп һөйләшеү.* ■ *Аҙнаголдо тәү тапҡыр күргәндә Зөлхизәгә ун алты йәш кенә ине.* З. Биишева.

**4.** Баштан үткәреү; кисереү. *Аҙап күреү. Ауырлыҡ күреү. Рәхәт күреү. Яҙганды күреү.* ■ *Һис бер иркәләүҙе күрмәгән күңел йомшарып китте. Үҙемде бала кеүек һиҙҙем.* Д. Юлтый. *Салауаттың күргән газаптары ерҙән ашып күккә олгашты* (Халыҡ йырынан). / Ниндәйҙер эш-хәлдең нәтижәһен үҙеңдә татыу; кисереү. *Кешенән күргән изгелек. Баланан күргән кәҙер. Эштең файҙаһын күреү.* ■ *[Рәхимә:] Мин уны [Айбулатты] касан ситкә ҡаҡҡаным бар. Агаһынан да уҫаллыҡ күрҙәм тип әйтә алмаҫ.* Һ. Дәүләтшина. / Ниндәйҙер насар хәлгә осрау, баштан үткәреү. *Зарар күреү. Зыян күреү.*

**5.** Кем йәки нимәгәләр эйә булыу, ҡулда булып эш итеү. *Аш-һыу күргән кеше. Бала күрмәгән әҙәм.*

**6.** Ҡайһы бер үҙ аллы һүҙҙәр менән килеп, кем йәки нимәнеләр нисек тип тапҡанды, кем йәки нимә тип иҫәпләгәнде белдергән һүҙбәйләнеш яһай. *Дуҫ күреү. Йәндәй күреү. Тиң күреү. Яҡын күреү. Яман күреү.* ■ *Йәшермәйем, минең дә бар ине күҙ алмамдай күреп һөйгәнем.* А. Игебаев. **Үҙ күреү** үҙ кешең итеп, яҡын итеп ҡарау; яҡын күреү. / Кем йәки нимәнеләр нисек, ни рәүешле тип тапҡанды белдергән һүҙбәйләнеш яһай. *Ҡыҙыҡ күреү. Танһыҡ күреү. Хуп күреү.* ■ *Тушәктәй уҡ күреп йоҡлар инем Ҡырҡты тауҙың ҡая таштарын* (Халыҡ йырынан). **Әллә ниҙәй күреү** бик ҡәҙерлегә һанау.

**7.** Сәбәбен кемдән йәки ниҙәндер тип уйлау. *Кешенән күреү.* ■ *Ерәнсәкәй атым, эй, еләалмай, ҡамсыларым юктан күрәмен* (Халыҡ йырынан).

**8.** Үҙ аллы һүҙҙәр менән килеп, нимәләр тураһында ҡайғыртыу төшөнсәһендәге һүҙбәйләнеш яһай. *Сара күреү. Хәстәрен күреү.* ■ *Шунда уҡ сәфәр ярагын күреп.., вокзалга төшөп киттек.* Ш. Хоҙайбирҙин. *Хеҙмәт коллективтары .. [үҙ агзаларының] политик аңлылыгын, культураһын һәм профессиональ квалификацияһын күтәреү тураһында хәстәрлек күрә.* Башҡорт АССР-ының Конституцияһы, 1984.

**9.** *бойр. ф.* Хәл ҡылымдың *ға/гй* формаһынан һуң килгәндә, үтенгәнде белдерә. *Йыгыла күрмә. Әйтә күр. Эшләй күр.* ■ *[Халыҡ — Бабсакка:] Һаклана күр, батыр, был әҙәмдән. Ул бер-бер шомлоҡ уйлап йөрөй бында.* «Бабсаҡ менән Күсәк».

♦ **Алдан күреү** ни булырын алдан белеү. **Бнле ер күрмәгән** *ҡар.* **бил. Донъя күреү** *ҡар.* **донъя. Йоҡо күрмәү** йоҡларға мөмкинлек булмау, йоҡлай алмау. *[Новиков:] Беҙ окопта айҙар буйы йүнле йоҡо күрмәнек.* Д. Юлтый. **Күҙ күргән** *ҡар.* **күҙ. Күҙ күрер** ни булырын йәки ни эшләргә икәнен ваҡыты еткәс белербеҙ, тигән мәғәнәлә әйтелә. **Күргәнең-күрмәгәнең шул булһыи** йәлсемә, тапҡаныңдың аҡтығы шул булһын, тигән мәғәнәлә әйтелә. **Күр ҙә тор** һис шикләнмә; көт тә тор. *[Ҡотлояр — Айбулатка:] Ныязгол һиңә ярҙам иткәндә лә уның өсөн биш ҡат тиреңде һуйып түләтер. Күр ҙә тор.* Һ. Дәүләтшина. **Күреп туймаҫлыҡ** (*йәки* **туя алмаҫлыҡ**) бик һылыу, бик матур тигән мәғәнәлә әйтелә. *Күреп туймаҫлыҡ ҡыҙ бала.* ■ *Күреп туймаҫлыҡ бер күк ат гәскәрҙәрҙең ҡаршыһына уйнаҡлап килеп сыҡҡан, ти* (Әкиәттән). **Күрмәгәнен күреү** бик ныҡ яфаланыу. **Күрмәгәнен күрһәтеү** 1) бик ныҡ ыҙалатыу; 2) тейешле язаны биреү, туҡмау. *Дәүләтбай агай күрмәгәнен күрһәтте аҡтарҙың.* Ә. Вахитов. **Күрмәҫтәй булып** ҡомһоҙланып, ҡомарланып. *Күрмәҫтәй булып ашау.* **Күрмәҫтәй булғанһың икән** кемдер урынһыҙға ҡомарлыҡ, ҡомһоҙлоҡ күрһәткәндә әйтелә. **Күрә алмау** кем йәки нимәгәләр ҡарата нәфрәт тойғоһо кисереү; ныҡ яратмау. *[Таибә әбей:] Хаммалымды, коммун тип күрә алмайҙар.* З. Биишева. *Тыуган илгә һөйөү арткан һайын, күрә алмауым артты дошманга.* Ғ. Сәләм. **Күрә алмаусылыҡ** кем йәки нимәгәләр ҡарата булған нәфрәт хисе. *[Уралыма булган] һөйөүем күрә алмаусылыҡка әйрәтте.., дошмандарга нәфрәтемдең утын дөрләтте.* Б. Моҡамай. **Күрә баға** *ҡар.* **күрә тороп. Күрә ҡарау** *ҡар.* **ҡарау. Күрә тороп** (*йәки* **тора**) белгән көйгә, белә тороп; оятһыҙ рәүештә. *Күрә тора алдашыу.* ■ *Беҙ үткән замандарҙа ниҙәр күрҙек? Күрә тороп зарарлы эш ҡылыусы тиләләр күрҙек.* М. Ғафури. **[Үтәнән] үтә күреү** кешенең уй-фекерен белеп, һиҙеп тороу. **Һин күр ҙә мин күр** ҡарап торған ерҙән кем йәки

низер ҡапыл китеп юҡ булғанда әйтелә. *Зәйнәп ҡарсыҡ тиҙ генә ишекте асып һыҙҙы. Һин күр ҙә мин күр.* Ш. Шаһәр. **Эт күрмәгәнде күреү** ҙур ауырлыҡ кисереү, ыҙа сигеү.

● *Ишеткән менән күргән бер түгел.* Мәҡәл. *Тун күрмәгән тун күрһә, ҡаға-ҡаға бөтөрөр, ат күрмәгән ат күрһә саба-саба үлтерер.* Мәҡәл.

**КҮРЕШ** *и. диал.* Тамаша.

**КҮРЕШЕҮ** *ҡ.* **1.** Бер-беренде күреү; осрашыу. *Оҙаҡ йылдар күрешмәй тороу. Һирәк күрешеү.* ■ *[Ҡадир менән Фатиманың] дуҫлыҡтары тағы ла нығып китте, көн һайын күрешмәй тора алмаҫ булдылар.* Б. Бикбай. *Ике батыр күрешеп һөйләшергә килештеләр. Йәшерен күрешеү урыны итеп ышаныслы бер башҡорттоң .. йәйләүен һайланылар.* Ғ. Хөсәйенов.

**2.** Ҡул биреп иҫәнләшеү. *Ике ҡуллап күрешеү.* ■ *[Малай] һалҡында өшөгән бәләкәс кенә йомшаҡ ҡулын биреп күреште.* Д. Юлтый.

● *Алты йәшәр юлдан ҡайтһа, алтмыш йәшәр күрешә килер.* Мәҡәл.

**КҮРЕШТЕРЕҮ** *ҡ.* Үҙ-ара осраштырыу. *Ҡыҙ апаһын, йылға буйына алып барып, Әлеүкәй менән күрештергән, ти* (Әкиәттән).

**КҮРК** *и.* Төҫ биреп, биҙәп торған яҡшы сифат; матурлыҡ. *Хужалар .. ҡурай, йыр-моң, бейеү оҫталарын да тапҡандар. Шулай итеп, йыр, уйын-көлкө табынға бер күрк өҫтәне.* Ғ. Хөсәйенов. *Салауат батыр булмағанда, был илдәрҙең беҙгә ни күрке* (Халыҡ йырынан).

● *Батыр егет — яу күрке, сәсән егет — дау күрке.* Мәҡәл. *Алмаҡ күрке — бирмәк.* Әйтем.

**КҮРКЛЕ** *с.* Үҙенә бер төрлө йәм һәм матурлыҡҡа эйә; күркәм. *Һай, Урал тау, ғорур тау, күрер күҙгә күркле тау.* Б. Вәлит. *[Иҙеүкәй менән Мораҙым] хур ҡыҙындай күркле хан ҡыҙҙарын .. үҙҙәренә ҡол-кәнизәк яһай.* «Иҙеүкәй менән Мораҙым».

**КҮРКҺЕҘ** *с.* Йәме, матурлығы булмаған; күңелгә ятмаған, яғымһыҙ.

● *Күреп алған күркһеҙҙән күрмәй алған күркле күркәм.* Мәҡәл.

**КҮРКӘ** *и.* **1.** Тауыҡ һымаҡтар ғаиләһенә ҡараған эре йорт ҡошо (ит өсөн үрсетелә). *Ата күркә. Инә күркә.*

**2.** Маҡтансыҡ, ҡупым кешегә ҡарата әйтелә.

◆ **Күркә кеүек ҡабарыу** 1) тиҙ тоҡанып, ҡыҙып барыу; 2) бушҡа маһайыу, әллә кем булып кәпәренеү. *Ниңә инде урынға индем тип күркә кеүек ҡабарынып йөрөргә.* С. Агиш.

● *Күркә елгә һимерә.* Мәҡәл. *Күркә ҡыҙылға үс.* Әйтем.

**КҮРКӘБАШ** *и. ҡар.* **ҡорохтан.**

**КҮРКӘМ** *с.* **1.** Күренешкә матур, күңелгә ятышлы. *Төҫкә-башҡа күркәм. Күркәм булыу. Күркәм итеү.* ■ *Килсәле, иркәм.., кил сабиәм, күркәм күҙеңде түйғансы бер ҡарайым.* Ш. Бабич. *Украина! Күркәм икән данлы башҡалаң һинең.* Р. Ниғмәти.

**2.** *күсм.* Үҙенә башҡа бер яҡшы сифатлы; матур, һоҡланғыс. *Күркәм тормош.* ■ *Кешеләр ана колхоз булып, ниндәй күркәм булып йәшәй башланы.* Б. Бикбай.

● *Күркәмгә күмер ҡабы ла килешә.* Әйтем.

**КҮРКӘМЛЕК** *и.* Күркле итеп күрһәткән сифат, матурлыҡ, йәмлелек. *Тәбиғәт күркәмлеге. Күркәмлек өҫтәү.* ■ *Көҙ күркәм ул алтындары менән, ҡыштың күркәмлеге аҡ ҡарҙа.* Т. Арслан.

**КҮРКӘМЛӘНДЕРЕҮ** *ҡ.* Күркәм итеү; йәмләндереү. *Йылы ҡояш, шифалы ямғыр бөтә йыһанды йәшәртеп, күркәмләндереп ебәрҙе.* «Совет Башҡортостаны», 1966, 21 июль.

**КҮРКӘМЛӘНЕҮ** *ҡ.* Күркәмгә әйләнеү, күркәм булыу. *Күркәмләнә төшөү.* ■ *Бала тыуғас, уларҙың [йәштәрҙең] тормошо тағы ла күркәмләнеберәк киткәндәй күренде.* Д. Исламов. *Ҡараuатты ҡаласараҡ итеп ... йыйыштырып, шаршау ҡороп та ебәргәс, түр яҡ бөтөнләй күркәмләнеп китте.* Р. Солтангәрәев.

**КҮРКӘМЛӘТЕҮ** *ҡ. ҡар.* **күркәмләндереү.**

**КҮРКӘМЛӘҮ** *ҡ.* Күркәм итеү, күрк биреү. *Ҡамыш күлде күркәмләй.*

**КҮРМӘ** *р. ҡар.* **күрмәксе.** *Твердышевтан күрмә .. Себер ҡуписе Мясников Өфөнән түбән Ағиҙел буйында Благовещенск заводын һалды.* Ғ. Фәхретдинов.

**КҮРМӘКСЕ** *р.* Кемдәндер күреп, шуға эйәреү рәүешендәге. *Сәлмән ағай Ғәйшә апай менән иҫәнләшкәндә ҡул һыртын үбеп алды. Мин дә унан күрмәксе Зөләйха्ның ҡулын үбергә уйлағайным да батырсылыҡ итеп булманы.* Т. Йәнәби. *Кешенән күрмәксе беҙ ҙә өмә үткәрергә ҡарар иттек.* С. Ҡулибай.

◆ **Үрмәксенән күрмәксе** берәүҙән берәү күреп эшләгәндә әйтелә. *Бәләкәстәре лә үрмәксенән күрмәксе тигәндәй, өлкәнерәктәре ҡыланғанды ҡыланған булалар.* Р. Ғабдрахманов.

**КҮРМӘЛЕК** *и.* **1.** Егет туғандарының килендә тәү күргәндә биргән бүләге; күрәнә. *Килен килде күрегеҙ, күрмәлеген бирегеҙ. Килен битен асабыҙ, өлөшөн әйтеп инегеҙ* (Туй йырынан).

**2.** *диал.* Күренес.

**КҮРМӘЛЕКЛЕ** *с.* Төҫкә-башҡа һөйкөмлө, күрер күҙгә матур. *Күрмәлекле бала.* ■ *[Мәғфүрә:] Ярлы ҡыҙы булһа ла, күрмәлекле булһын тип, Гөлйөҙөмдө алырға һарылып яталар, ти.* Һ. Дәүләтшина.

**КҮРМӘЛЕКҺЕҘ** *с.* Күрер күҙгә матур булмаған; һөйкөмһөҙ. *Ҡарамаҡҡа күрмәлекһеҙ булыу.*

**КҮРМӘМЕШ: күрмәмеш булыу** *йәки* **күрмәмешкә һалышыу** күрмәгән кеше булып ҡыланыу, күргәнде белгертмәгән булыу. *[Фәниәгә] әүәле лә .. осрағаным бар ине. Икебеҙ ҙә ситкә ҡарап күрмәмешкә һалышып уҙа инек.* Ф. Иҫәнғолов. **Күрмәмеш тә белмәмеш** бер ни күрмәгән, белмәгән кеше булып ҡыланғанда әйтелә. *Ағай миңә ишаралар яһай. Мин инде — күрмәмеш тә белмәмеш.* М. Кәримов.

**КҮРНИС** *и. диал. ҡар.* **күренес** 1.

**КҮРНӘК** *и.* Килендең ҡайны-ҡәйнәһе менән тәүге күрешеүе.

**КҮРНӘСӘ** [*рус.* горница] *и. диал.* **1.** Алты мөйөшлө өйҙөң ҙур яғы; оло яҡ.

**2.** Ҡунаҡ өйө.

**КҮРПӘ**[1] *и.* **1.** Яңы тыуған һарыҡ бәрәсе.

**2.** *с. мәғ.* Шул бәрәстең тиреһенән тегелгән. *Күрпә тун.* ■ *Меңгән генә атым бүртә лә, кейгән генә кейемем күрпә лә* (Халыҡ йырынан).

**КҮРПӘ**[2] *и.* Еңел генә итеп, дөйә йөнөнән һырыған юрған.

**КҮРПӘСӘ** *и. кар.* **күрпә** [2].

**КҮРФӘЗ** *и. иҫк. кит.* Эскә инеп торған диңгеҙ ҡолағы; ҡултыҡ. *Фин күрфәзе буйында блиндаждар ҡаҙып .. көтәбеҙ.* Ш. Хоҙайбирҙин.

**КҮРҺӘТЕЛЕҮ** *к. төш. кар.* **күрһәтеү** 1, 2, 5, 6, 9. *Һуңғы ваҡытта төҙөлөш ойошмаларының эшен яҡшыртыу буйынса ... етди ярҙам күрһәтелә.* «Совет Башҡортостаны», 1985, 27 ноябрь.

**КҮРҺӘТЕҮ** *к.* **1.** Иғтибар йүнәлтеү, ҡаратыу өсөн кемгә йәки нимәгәлер тоҡҡау, ишара яһау. *Төртөп күрһәтеү. Ымлап күрһәтеү. Ултырғыстан урын күрһәтеү.*

**2.** Ҡаратыу өсөн күҙ алдына ҡуйыу. *Фотоны күрһәтеү.* ■ *Аня йылмайҙы һәм биш бармағын күрһәтте. Тимәк, уға биш йәш.* С. Кулибай. / Тикшереү, ҡаратыу өсөн кемгәлер биреү. *Билет күрһәтеү. Паспорт күрһәтеү. Справка күрһәтеү. Мәҡәләне күрһәтеү.* / Һаулығын тикшереү өсөн ҡаратыу. *Врачҡа күрһәтеү.* ■ *Батшаның уртансы ҡыҙы сиргә һабыша. Батша уны күрәҙәгә күрһәтә.* (Әкиәттән). / Тамаша ҡылдырыу. *Кино күрһәтеү.* ■ *[Бер егет:] Иптәштәр, һеңел-туғаштар, бирегеҙ әле миңә брошкамы, йөҙөкмө. Хәҙер .. фокус күрһәтәм.* С. Агиш. / Таныштырыу өсөн тамаша иттереү. *Ауылды күрһәтеү. Музейҙы күрһәтеү.* ■ *Экскурсанттарҙы пионерҙар ҡунаҡ итеп ҡаршы алдылар. Парк, пляж, ятаҡ, дворецтарын күрһәтергә алып барҙылар.* Ғ. Сәләм.

**3.** Күҙгә күренерлек итеү, күрергә мөмкинлек биреү. *Болот ҡояшты күрһәтмәй. Күҙлек яҡшы күрһәтә.* ■ *Егеттең кешегә күрһәтмәй торған итеге бар, ти* (Әкиәттән).

**4.** Ниндәйҙер төҫтә, сифатта сағылдырыу. *Йәмһеҙ (итеп) күрһәтеү. Ологайтып күрһәтеү.* / Ниндәйҙер билдәне сағылдырыу, белгертеү. *Арығанын төҫө күрһәтә.* ■ *Ямғырҙың үҙ ваҡытында булыуы игендәрҙең ҡамылға ғына түгел, башаҡҡа ла төшөмлө булырын күрһәтеп тора.* Ғ. Дәүләтшин. *Өйҙә, кейемдә .. мосолман билдәләре юҡ. Тик мөйөштә иконалар урынында торған көрьән генә уларҙың мосолман икәнен күрһәтә.* Д. Юлтый.

**5.** Нимәнеңдер барлығын йәки юҡлығын әйтеү, асыҡлап, дәлилләп биреү, белдереү. *Эштәге кәмселекте күрһәтеү. Кешенең яҡшы яғын күрһәтеү.* ■ *Ғаризаны яҙыусылар ашлыҡ булмауын күрһәттеләр. Был дөрөҫ, ҡаршы килеп булмай.* Б. Бикбай. / Нисек эш итергә өйрәтеү, күрһәтмәләр биреү, аңлатыу. *Тормошҡа юл күрһәтеү. Мастер күрһәтеүе буйынса эшләү.* ■ *Әйтер инең Әхмәт.., кемдәр күрһәткәнен, ысын тормошҡа барыу һукмағын.* Ғ. Сәләм.

**6.** Урынға һайлау йәки ҡуйыу өсөн тәҡдим итеү. *Депутатлыҡҡа күрһәтеү.* ■ *Йыйылыштың көн тәртибен шунда уҡ аңлап алдым: һайлау участкаһына төҙөүселәр коллективынан бер кеше күрһәтергә кәрәк.* Ә. Бикчәнтәев.

**7.** Ниҙеңдер иҫәбен, күләмен билдәләп, күҙ алдына баҫтырыу (төрлө приборға ҡарата). *Сәғәт өстө күрһәтә. Барометр ямғырҙы күрһәтә. Термометр 22° йылылыҡты күрһәтә.*

**8.** Үҙендәге берәй сифатты кешегә асыу, белгертеү. *Кем икәнеңде күрһәтеү. Уҫаллығыңды күрһәтеү.* ■ *Ҡыш һуңғы тапҡыр .. ажарын күрһәтеп ҡалырға тырыша.* Б. Бикбай. / Билдәле бер хәлдә йәки сифатта танытыу. *Ғәйепле итеп күрһәтеү.* ■ *[Ныяҙгол — Имайға:] Бөтә мал көтөүҙәрен һиңә бүлеп биреп, һине башҡа сыҡҡан итеп күрһәтәм.* Һ. Дәүләтшина.

**9.** Үҙаллы һүҙҙәр менән килеп, ошо һүҙҙән аңлашылған эш-хәрәкәтте башҡарыуҙы, бойомға ашырыуҙы белдәрә. *Изгелек күрһәтеү. Ҡәҙер-хөрмәт күрһәтеү. Батырлыҡ күрһәтеү. Уңғанлыҡ күрһәтеү. Ҡаршылыҡ күрһәтеү.* ■ *Фәһимә эшкә мөнәсәбәте, ижтимағи активлығы менән башҡаларға өлгө күрһәтә.* «Совет Башҡортостаны», 1985, 4 декабрь.

**10.** *-п* формаһындағы хәл ҡылымы менән килеп, ниндәйҙер эш-хәрәкәтте кәүҙәләндереп, һүрәтләп биргәндә белдерә. *Атлап күрһәтеү. Йырлап күрһәтеү. Уҡып күрһәтеү.* ■ *[Сәгиҙә балаларға] төрлө уйын өйрәтте, физкультура күнекмәләре яһап күрһәтте.* М. Тажи.

♦ **Алла** (*йәки* **хоҙай) күрһәтмәһен** бер насар хәлдең булыуын теләмәгәндә әйтелә. **Көн күрһәтмәү** интектереү, яфалау. **Күрмәгәнеңде күрһәтермен** янағанда әйтелә. **Ҡунаҡ күрһәтеү** *кар.* **ҡунаҡ. Эш күрһәтеү** *кар.* **эш.**

● *Арбаң ватылғас, юл күрһәтеүсе күп була.* Мәҡәл. *Донъя бер алдын, бер артын күрһәтә.* Мәҡәл. *Эшең теүәл булмаһа, кешегә күрһәтмә.* Әйтем.

**КҮРҺӘТКЕС** [1] *и.* **1.** Берәй эштең торошон күрһәткән мәғлүмәт, билдә. *Техник-экономик күрһәткестәр. Сифат күрһәткестәре.* **2.** Эш-хеҙмәттең барышын белгерткән һан, һыҙыҡ һ. б. *Ферма буйынса уртаса күрһәткес ете литр, ә алдынғы һауынсылар һигеҙ литрҙан уҙҙыра.* «Совет Башкортостаны», 1965, 4 июль. **Күрһәткес таҡталар** эш барышын белгерткән һандарҙы яҙа торған таҡта.

♦ **Дәрәжә күрһәткесе** *мат.* һандың, аңлатманың ниндәй дәрәжәгә күтәрелеүен күрһәткән һан йәки хәреф.

**КҮРҺӘТКЕС** [2] *и.* Яҙма, һыҙма нәмәләрҙе аңлатҡанда күрһәтеп тороу өсөн ҡулланылған махсус нәҙек таяҡ.

**КҮРҺӘТМӘ** [1] *и.* Нимә йәки нисек эшләү тураһында бирелгән аңлатма; кәңәш. *Күрһәтмәләр биреү. Пленум күрһәтмәләренән сығып эш итеү.* ■ *Хөкүмәт органдары .. сиҙәм ерҙәрҙе асып иген сәсеү тураһында күрһәтмә бирҙе.* Ә. Вәли.

**КҮРҺӘТМӘ** [2] *с. кар.* **күргәҙмә** [2]. *Күрһәтмә сығыштар ойоштороу.*

**КҮРШЕ** *с.* **1.** Урыны, ере эргәләш булған. *Күрше ауыл. Күрше ил. Күрше өй. Күрше булыу.* // *Күрше йәшәү.* ■ *[Гөләйшә:] Балалар, әйҙә күрше бүлмәлә сисенегеҙ.* К. Кинйәбулатова. *Кемдер баҫты тальян телдәрен. Беләм, былар күрше ял йортонан, шулай башлай улар көндәрен.* Ғ. Сәләм. *Күрше генә тороп, күрешә йөрөп, янмай микән уның йөрәкәйе* (Халыҡ йырынан).

**2.** *и. мәғ.* Эргәләш өйҙәге, эргәләш урындағы кеше. *Күрше менән татыу йәшәү.* ■ *Уты һүнһә, ингән күршеһенә күршенең дә була төрлөһө.* Н. Нәжми. **Ут күрше** иң яҡын күрше. *Бер көн*

*шулай кислэтеп кенэ Ғафуриҙарға барҙым. Беҙ бит уның менэн ут күрше инек.* Ғ. Ғүмэр.

**3.** *и. мәғ.* Йэштэр уйыны (барыһы ла ишлэнеп ултыра; уйын башы, «күршең менэн татыумы», тип рэттэн һорап йөрөй; шунда бераү «татыу түгел», ти ҙэ икенсе кешенең ишен һорай; ишен бирергэ телэмэһэ, наказ буйынса уйын башы уның усына ҡайыш менэн һуға; шуға сыҙаһа — ише ҡала; сыҙамаһа — ишен алалар); ҡайыш һуҡҡыс.

● *Күршегэ онға кермэһэң дэ, көлгэ керерһең.* Мэҡэл. *Күрше хаҡы — тэңре хаҡы.* Мэҡэл.

**КҮРШЕ-КӨЙЭН** *и. диал.* Күрше-күлэн.

**КҮРШЕ-КҮЛЭН** *и. йыйн.* Тирэ-яҡ күршелэге кешелэр. *Күрше-күлэнде саҡырыу.* ■ *Олонокесене айырмай, сэлэм эйткэн күршекүлэнгэ.* Ғ. Ғүмэр. *[Карсыҡ:] Иҫке нигеҙҙэ ҡалырға булдым. Өйрэнгэн күрше-күлэнде лэ .. ташлап сығыуы йэл.* Т. Ғарипова.

**КҮРШЕ-КҮЛЭНКЕ** *и. диал.* Күрше-күлэн.

**КҮРШЕЛЭШ** *р.* Күрше булып, эргэлэш. *Аҡташ тигэн ауылда күршелэш кенэ ике дуҫ йэшэгэн* (Экиэттэн).

**КҮРШЕ-ТИРЭ** *и.* **1.** *йыйн.* Яҡындағы урата; яҡын-тирэ, тирэ-яҡ. *Күрше-тирэлэге ауылдар ҙа шул Ишэленэн таралып ултырған, ти* (Экиэттэн).

**2.** *ҡар.* **күрше-күлэн.**

**КҮРШЕ-ЯБА** *и. диал.* Күрше-тирэ.

**КҮРЭ** *бэйл.* **1.** Төбэү килештэге сифат йэки үткэн заман сифат ҡылымдан һуң килеп, эш-хэлдең сэбэбен белдерэ. *Ныҡҡа күрэ бирешмэй.* ■ *Бик арыған булғанға күрэ ул шунда уҡ йоҡлап китте* (Экиэттэн). *Был түрэлек бирелде микэн, аҡылдары камилға күрэ* (Халыҡ йырынан).

**2.** Төбэү килештэге эйэлек ялғаулы исемдэрҙэн һуң килеп, алдағы төшөнсэнең ошо исемгэ ярашлы рэүештэ булғанын белдерэ. *Беҙҙең халыҡ борон-борондан үҙ тарихы, үҙ культураһы менэн ныҡ ҡыҙыҡһынған. Заманына күрэ уҡымышлы кешелэре лэ булған.* З. Ураҡсин.

♦ **Үҙенэ** (*йэки* **үҙемэ, үҙебеҙгэ, үҙеңэ, үҙегеҙгэ, үҙҙэренэ) күрэ** үҙенэ ярарлыҡ, талабына тура килгэн. *Үҙебеҙгэ күрэ квартир ҙа табылды.* С. Агиш. *[Байгильдин:] Һэр түрэ үҙенэ күрэ көн күрэ.* Х. Ғилэжев. **Үҙеңэ күрэ түгел** кемдең йэки ниҙеңдер эше, булмышы көткэндэн, уйлағандан артығыраҡ булып сыҡҡанда көлөбөрэк эйтелэ. *Ҡара һин уны, үҙенэ күрэ түгел ялбыр баш.. Ирҙэр белмэгэнде белэ бит.* Б. Бикбай. **Шуға күрэ** шуның өсөн, шул сэбэпле. *Ғашиҡ булған ул [Юламан ҡарт] диңгеҙгэ. Шуға күрэ бөтэ ғүмерен диңгеҙ ярында уҙғарған.* З. Биишева.

● *Сөйөнэ күрэ туҡмағы, туйына күрэ таҡмағы.* Мэҡэл.

**КҮРЭ-БАҒА** *р.* Күрэ, белэ тороп; күрэлэтэ. *Күрэ-баға бысраҡҡа баҫаһың бит.*

**КҮРЭ-БЕЛЭ** *р. ҡар.* **күрэ-баға.**

**КҮРЭГЭ** *и.* Һөйэген алып киптергэн өрөк.

**КҮРЭГЭС** *с. диал.* Яҡшы күргэн, оҫҡор күҙле. *Күрэгэс кеше.*

**КҮРЭҘЭ** *и.* **1.** Кешенең тормошон, аҙмышын кэрт, ноҡот һалып йэки башҡа юл менэн юрап эйтеүсе; бағымсы. *Сыртаҡ тигэн батшаның ҡатыны ҡыҙ таба. Күрэҙэ килеп, ҡыҙ үҫеп еткэс, юғала, ти. Батша бик ҡайғыра* (Экиэттэн).

**2.** Алдан күрэ белгэн кеше.

● *Йыбанмаған оҫта булған, оялмаған күрэҙэ булған.* Мэҡэл.

**КҮРЭҘЭЛЕК** *и.* **1.** Кэрт йэки ноҡот һалыу эше, килэсэкте юрау эше. Күрэҙэлек менэн шөғөллэнеү.

**2.** *ҡусм.* Алдан күреп, белеп тороу һэлэте. *[Гөлнэфисэ Надыровка:] шулаймыни? .. Һеҙҙең шулай күрэҙэлек тэ бармы ни эле?* С. Агиш.

■ **Күрэҙэлек итеү** юрау, алдан эйтеү.

**КҮРЭҘЭСЕ** *и. ҡар.* **күрэҙэ** 1.

**КҮРЭЛЭТЭ** *р.* Күрэ, белэ тороп; күрэ-баға. *Күрэлэтэ кеше өҫтөнэ бэлэ яғыу.* ■ *Кемдең инде күрэлэтэ насар пьеса яҙғыһы килһен?!* Н. Нэжми.

**КҮРЭН**[1] *и.* **1.** Дымлы урында үҫэ торған суҡ тамырлы бейек ҡаты ҡыяҡ үлэн. *Йэш күрэн. Күрэн ҡыяғы. Күрэн сабыу.* ■ *[Күлдэрҙең] күбеһендэ һыу кэмегэн, ситтэрен ҡамыш, күрэн баҫҡан.* Э. Вэли.

**2. Күрэндэр** *бот.* Бер өлөшлө күп йыллыҡ үҫемлектэр ғаилэһе (күрэн, ҡамыш һ. б.).

**КҮРЭН**[2] *и. иҫк.* Ғэскэр ваҡытлыса туҡтап ятҡан урын; лагерь. *[Егеттэр] бер-бер артлы ҡуҙғалып, драгундар ҡырылған күрэнгэ ҡарай сапты.* Ғ. Ибраһимов.

**КҮРЭНЭ** *и.* Килен менэн тэү күрешкэндэ егеттең туғандары һалған бүлэк, күрмэлек.— *Ҡайны-ҡэйнэңдэр, ҡайнағаларың күрэнэ бирерҙэр, йөҙөңэ һөртөп ал.* М. Буранғолов.

**КҮРЭСЭК** *и.* Алда булаһы аҙмыш, башҡа килэсэк хэл (ғэҙэттэ ҡыйынлыҡ килгэндэ эйтелэ). **Күрэсэктэр бар икэн** ауыр хэлгэ ҡалғанда эйтелэ. *Ошо һуғыш арҡаһында күрэсэктэр бар икэн* (Бэйеттэн).

● *Күрэсэкте күрмэй, гүргэ инеп булмай.* Мэҡэл. *Күрэсэк күҙ йомдора.* Мэҡэл.

**КҮРЭҺЕ** *и. ҡар.* **күрэсэк.** *[Бэҙеголямал:] Я алла, я хоҙай, күрэһелэребеҙ бар икэн.* В. Исхаков.

● *Күрэһен күрмэй кеше гүргэ инмэй.* Эйтем.

**КҮРЭҺЕҢ** *инш.* Берэй нэмэгэ ҡарата фарази фекергэ килгэндэ эйтелэ. *Күрэһең, йылмая белеү ҙэ үҙенэ бер һөнэр.* З. Биишева. *Алпамышаның ҡошо барлығын тегелэр белмэгэн. Күрэһең, бер ҙэ иғтибар итмэгэндэр.* «Алпамыша».

**КҮРЭШ** *с.* Күҙе алыҫтан күрмэй, яҡындағына күреүгэ һэлэтле. *Күрэш кеше.* / Алыҫтан насар күргэн (күҙгэ ҡарата).

**КҮРЭШЛЕК** *и.* Күҙҙең алыҫтан насар күреүе. *Физкультура, спорт менэн даими шөғөллэнгэн уҡыусыларҙа күрэшлек һирэк була.* «Совет Башҡортостаны», 1986, 30 ғинуар.

**КҮС**[1] *и.* **1.** Бал ҡортоноң бер инэ эргэһендэге ғаилэһе. *Йэш күс. Бэлэкэй күс. Оло күс. Күс йыйыу. Күс айырҙы. Күс китте.* ■ *Был тирэккэ элек йыл да күс ҡуна торғайны.* Ж. Кейекбаев. *Зал, умарта күсе кеүек, гөжлэй башланы.* Ғ. Лоҡманов. **Күс ҡундырыу** умартанан осоп киткэн ҡорт күсен һарытыу. / Ойошҡан халыҡ. *Ил күсенэ яу килгэндэ ни йэне менэн [Кинйэ] иптэштэрен ташлап китһен.* Ғ. Ибраһимов.

**2.** Көтөү булып китеп барған йэнлек, ҡош-ҡорт

төркөмө. *Ҡаҙ күсе.* ■ *Ыласын да оса, күсте кыя, канаттары талып бер төшә.* «Юлай менән Салауат». / Тейәнеп, малын эйәртеп китеп барған халыҡ төркөмө. *Мең ярымдан артыҡ һыбай бөтә ауылды ябырып алды.* Һ. Дәүләтшина.

**3.** Йәйгелеккә күсеп килеп йәшәгән урын; йәйләү. *Ул замандарҙа беҙҙең халыҡ күскә .. Урал буйҙарына китә торғайны.* С. Кулибай. **Күс юлы** йәйләүгә бара торған юл.

● *Күсәрем һынды тип, күстән ҡалма.* Мәҡәл.

**КҮС** [2] [*рус.* куча] *и.* *һөйл.* Күмер өсөн үртәргә һалған ағас өйөмө.

**КҮСЕМЛЕ: күсемле ҡылым** *грам.* мәғәнәһе билдәле бер объектҡа төбәлгән, билдәле һәм билдәһеҙ төшөм килеш менән идара иткән ҡылым (мәҫ. уҡытыу, кейендереү).

**КҮСЕМҺЕҘ: күсемһеҙ ҡылым** *грам.* объектҡа ҡарата бер ниндәй ҙә мөнәсәбәт белдермәгән, үҙенән һуң килгән тултырыусының төшөм килештә тороуын талап итмәгән ҡылым (мәҫ, атлау, көлөү).

**КҮСЕНЕҮ** *к.* *ҡайт.* *ҡар.* **күсеү** 2. *Күсенеп йөрөү. Күсенеп китеү. Күсенеп ҡайтыу.* ■ *Бабай йәйләүҙе ташлап, йәһәт кенә икенсе ергә күсенеп киткән* (Әкиәттән).

**КҮСЕНКЕРӘҮ** *к.* Саҡ-саҡ ҡына урындан күсеү, шылыу.

**КҮСЕР** [1] [*рус.* кучер ⟨*нем.*] *и.* Кеше ултыртып, ат тотоп барыусы; ат тотоусы. *Күсерһеҙ йөрөү. Күсергә ултырыу. Күсер ултыртыу.* // *Күсер малай.* ■ *Ялан ҡуллы күсер егет дилбегәне тотҡан урап.* М. Кәрим.

**КҮСЕР** [2] *с.* Көҙөн йылы яҡҡа осоп китә торған; күсмә. *Күсер ҡоштар.*

**КҮСЕРГЕЛӘҮ** *к.* Бер тегеләй, бер былай күсереү, ваҡыт-ваҡыт урынын алыштырыу. *Ҡотлогужа бабай ҡағыҙын бер ҡулынан икенсеһенә күсергеләп торҙо ла: — Миңнеғәли, киттек..— тип ҡуйҙы.* Р. Солтангәрәев.

**КҮСЕРГЕС** *и.* **1.** Сигә торған өлгө.

**2.** Ишәйтеп яҙа торған ҡара ҡағыҙ; копирка.

**КҮСЕРЕК** *и.* *һөйл.* Китаптың, яҙманың күсерелгән данаһы; күсермә [*Шәрифулла:*] *Мулла кем, сәйгә рәхим ит. Миндә Зәки хәлфә Шәмсетдиндең күсеректәре бар.* Ә. Вахитов.

**КҮСЕРЕЛЕҮ** *к.* *төш.* *ҡар.* **күсереү** 1—6, 8. *Дәрес төштән һуңға күсерелде.* ■ *Бығаса газ менән эшләүсе быяла иретеү мейесе реконструкциянан һуң электр энергияһына күсереләсәк.* «Совет Башҡортостаны», 1985, 16 октябрь.

**КҮСЕРЕНКЕРӘҮ** *к.* Саҡ-саҡ ҡына урыныиан шылдырыу, күсерә биреү. *Урындыкты күсеренкерәп ултыртыу.*

**КҮСЕРЕҮ** *к.* **1.** Бер урындан икенсе урынға шылдырыу; урынын үҙгәртеү. *Өҫтәлде күсереү. Өйҙө күсереү. Төймәне күсереп баҫыу.* ■ *Айыуғолаҡ бара торғас, бер ерҙәге имәндәрҙе йолҡоп икенсе ергә күсереп йөрөгән кешене күргән, ти* (Әкиәттән). **Күсереп ултыртыу** үҫемлек, йәшелсәне ҡаҙып алып икенсе урынға ултыртыу. *Гөлдө күсереп ултыртыу. Рассаданы күсереп ултыртыу.* / Бер хәлдән икенсе хәлгә ҡуйыу. *Рычагты күсереү. Сәғәттең телен күсереү.*

**2.** Бөтә донъяһы, мал — мөлкәте менән бер ерҙән алып икенсе ергә урынлаштырыу. *Яңы йортҡа күсереү.* ■ *Утарҙың эҙе-юлы юҡ. Уны колхоз күсереп һалған.* Ә. Вахитов. *Харрас, Мөршиҙәне айвайына ҡуймайынса колхозға күсереп алып килде.* Ғ. Аллаяров. / Эш-хеҙмәт буйынса бер урындан алып, икенсе урынға урынлаштырыу. *Махсус мәктәпкә күсереү. Яңы эшкә күсереү.* ■ [*Ғаббас:*] *Иртәгә арышты һуға башлайбыҙ. Егеттәр һеҙҙе ырҙын табағына күсерәм* М. Тажи. / Юғарыраҡ баҫҡысҡа үрләтеү (уҡыу-уҡытыуҙа). *Кластан класҡа күсереү.*

**3.** Булыу шартын үҙгәртеү, икенсе ысулға ҡороу. *Халыҡты ултыраҡ тормошҡа күсереү. Эш аҙнаһын биш көнгә күсереү. Газға күсереү. Яңы алфавитҡа күсереү.* / Икенсе бер үлсәмгә әйләндереү. *Килограмға күсереп иҫәпләү. Метр системаһына күсереү.*

**4.** Билдәләнгән ваҡытын үҙгәртеү. *Йыйылышты күсереү.*

**5.** Яҙыуҙа һүҙҙәге ижекте икенсе юлға сығарыу. *Күсергәндә ижекте бүлергә ярамай.*

**6.** Берәүҙең ҡарамағынан икенсе кеше ҡарамағына тапшырыу. *Йортон ҡыҙының исеменә күсергән.* ■ *Иге-сиге күренмәгән иген йәйелеп ята. Был ерҙәр — Ныязголдоң ауыл кешеләренән әкренләп, оҫталап, арендаға, шунан мәңгелеккә әйләндереп үҙенә күсереп бөткән ерҙәре.* Һ. Дәүләтшина. / Бер урындағы күренеште икенсе шартҡа ҡуйыу. *Китаптан тормошҡа күсереү.*

**7.** *күсм.* Бүтән өлкәгә, икенсе яҡҡа йүнәлтеү (һүҙҙе һ. б.); бороу. *Фәхри башта тоҡанмаған шырпыны һүгеп алды .. Шунан һүҙҙе колхоз хәленә күсерҙе.* Б. Бикбай.

**8.** Бер ҡағыҙҙан ҡарап икенсеһенә яҙыу. *Китаптан күсереү. Таҙаға күсереү.* ■ *Китап күсереү эше менән күбеһенсә матур каллиграфиялы шәкерттәр, хәлфәләр шөғөлләнгән.* Ә. Харисов. / Кемдәндер ҡарап, яҙып алыу. *Мәсьәләне кешенән күсереп эшләү.* ■ *Күсерә торған гәҙәте бар Хәмиттең, сер түгел. Күсерер ине [Гөлсөмдән] хисапты, варианттары бер түгел.* Ф. Рәхимғолова.

**9.** Бер телдән икенсе телгә әйләндереү. *Шәмсе ҡояш тигән һүҙ ул, беҙҙең телгә күсерһәң.* М. Марат.

♦ **Мейеһен күсереү** *ҡар.* **мейе** 1.

● *Күршеһенән күрмәк күсермәк.* Әйтем.

**КҮСЕРЕШЕҮ** *к.* *урт.* *ярҙамл.* *ҡар.* **күсереү** 1, 2. *Өй күсерешеү.*

**КҮСЕРМӘ** *и.* Берәй яҙманың, һүрәттең, һыҙманың күсереп алынған данаһы; копия. *Ҡульяҙманың күсермәһе. Һүрәттең күсермәһе.*

**КҮСЕРТЕҮ** *к.* *йөкм.* *ҡар.* **күсереү.** *Күсертеп яҙҙырыу. Күсертеп һалдырыу. Икенсе эшкә күсертеү. Үҙ исеменә күсертеү. Газға күсертеү.* ■ *Әминбәк, үҙенең ата-әсәһен таптырып, үҙ янына күсертеп алған, ти* (Әкиәттән).

**КҮСЕҮ** *к.* **1.** Бер урындан икенсе урынға китеү; урын алыштырыу. *Күсеп ултырыу. Икенсе партаға күсеү. Шкаф урынынан күскән.* ■ *Таң яҡтылығы ситендә бер йондоҙ ялтырай. Ул күскән, миңә табан килгән кеүек була.* Д. Юлтый. / Бер хәлдән икенсе хәлгә килеү. *Сәғәттең теле күскән.* / Икенсе юлға сығыу (һүҙҙәге ижекқә ҡарата).

**2.** Урындан китеү, төйәк алыштырыу. *Күсеп йөрөү. Күсеп ҡайтыу. Йәйләүгә күсеү.— Бөтә ауыл халҡы мал-тыуары менән йәйләүгә күсеп бөткәйне.* С. Кулибай. *Аҫыл ҡоштар тирә-яҡтан бында күсте.* Ғ. Байбурин. / Эш-хеҙмәт урынын алмаштырыу, икенсе ергә урынлашыу. *Уҡытыу эшенә күсеү. Икенсе факультетҡа күсеү.* ■ *Ашлыҡ һуғыу башланғас, ҡыҙҙар ырҙынға эшкә күсте.* Р. Солтангәрәев. / Уҡыуҙа, эш өлкәһендә юғары баҫҡысҡа үрләү. *Кластан класҡа күсеү.* ■ *Сәйҙел диплом алды, Зәйнәп күсте һуңғы курсҡа.* Ғ. Сәләм. *Юғары лигаға күсеү турниры һәр йылды көсөргәнешле үтә.* «Совет Башҡортостаны», 1986, 23 ғинуар.

**3.** Ниндәйҙер ҡараш, фекерҙе ҡабул итеү, уны яҡлаусылар яғына сығыу. *Мосолман диненә күсеү.*

**4.** Берәүҙән икенсегә биреләү. *Әсәһенең ауырыуы күсте.* ■ *Хәбәр ҡалаға йәшен тиҙлеге менән таралды. Телдән-телгә күсеп ҡабартылды.* И. Насыри. *Экскаваторсы егеттең дәрте бара-тора шоферҙарға ла күсте.* Ш. Янбаев. / Берәүҙең ҡарамағынан икенсе берәүҙең ҡарамағына ҡалыу. *Власть Советтар ҡулына күсте. Донъяһы улына күсте.* **Күсә килгән** 1) берәүҙән икенсегә, быуындан быуынға бирелгән. *Төрҙәр араһындағы быуындан быуынға күсә килгән бәйләнеш;* 2) берәүҙән икенсе кешегә бирелгән (хоҡуҡҡа ҡарата). *Нәҫелдән нәҫелгә күсә килгән хакимлек. Күсә килгән мираҫ.*

**5.** Ниндәйҙер эш-хәрәкәтте тамамлап йәки ташлап, икенсене башлау, икенсегә төшөү. *Атлауға күсеү. Һүҙҙән эшкә күсеү. Төҙөлөш мәсьәләһенә күсеү. Һөжүмгә күсеү.* ■ *Мин шулай моңлана торғас, татлы уйҙарға күсәм. Төрлө хыялдарға батып, гәрше әгләгә осам.* Ш. Бабич.

**6.** Эш итеү рәүешен үҙгәртеү, икенсе ысулға ҡороу. *Ултыраҡ тормошҡа күсеү. Хозрасчётҡа күсеү. Газға күсеү.* ■ *Предприятиеларҙың хужалыҡ итеүҙең яңы шарттарына күсеүенә бәйле рәүештә уларҙың экономик стимуллаштырыу фондтары үҫә.* «Совет Башҡортостаны», 1985, 27 ноябрь.

♦ **Теге донъяға күсеү** үлеү.

● *Күсеп киткән иҫке йортонан котолған.* Мәҡәл.

**КҮСКЕН** *и.* Тауҙан ябырылып төшкән ҡар ишелмәһе. *Күскен аҫтында ҡалыу.*

**КҮСКЕНСЕ** *и.* Күсеп йөрөгән кеше йәки халыҡ. *Күскенселәр төркөмө. // Күскенсе халыҡ.* ■ *Күскенсе башҡорттарға был .. Таналыҡ буйы мөләйем күренгән.* Ҡ. Аралбаев. *Металлургияны ниндәйҙер күскенселәр ситтән алып килмәгән, ул бары тик шунда, уҙаллы барлыҡҡа килгән.* «Ағиҙел», 1980 № 3.

**КҮСМӘ** *с.* **1.** Күсеп йөрөгән, ултыраҡ булмаған. *Күсмә халыҡ.* ■ *Күптән, күптән булған ваҡиға был. Ул саҡта әле беҙҙең ата-бабалар күсмә тормошта йәшәгән.* З. Биишева.

**2.** Көҙөн йылы яҡҡа осоп китә торған; күсер. *Күсмә ҡоштар.*

**3.** Эшен даими бер урында алып бармаған, күсеп йөрөү мөмкинлеге булған. *Күсмә китапхана. Күсмә киноустановка.* ■ *Күсмә театрҙың хәҙерге ҡала театрҙарынан бер айырмаһы бар ине: гәҙәттә тамашасылар театрға килә, ә бында театр тамашасыларға бара.* С. Агиш. / Эш урынынан ситтә башҡарылған. *Күсмә сессия.*

**4.** Ярыштағы яңы еңеүсегә биреләә торған, еңеүсенән — еңеүсегә күсеп йөрөгән. *Күсмә кубок. Күсмә ҡыҙыл байраҡ.*

**5.** Ситләшкән, үҙгәргән. *Һүҙҙең күсмә мәғәнәһе.*

**КҮСМӘ-КҮС** *и. диал. ҡар.* **ҡамҡа** [2].

**КҮСМӘНДЕ** *с. диал. ҡар.* **күсмә** 1. *Күсмәнде халыҡ. Күсмәнде тормош.*

**КҮСТЕРЕҮ** *к. иҫк. кит.* Күрһәтеү.

**КҮСТЕРӘ** [*рус.* костёр] *и. бот.* Башаҡлылар ғаиләһенә ҡараған, ваҡ ҡына ялпаҡ башаҡлы, ҡыяҡ япраҡлы үлән төрө (бесән өсөн сәселә). *Ҡылсыҡһыҙ күстерә. Арыш күстерәһе.*

**КҮСТӘНӘС** [*рус.* гостинец] *и.* Бүләк итеп алып килеңгән йәки ебәрелгән ашамлыҡ. *Күстәнәс ебәреү. Күстәнәскә сәй биреү. Күстәнәскә саҡырыу.* ■ *Кеше хәлен белә барғанда күстәнәсһеҙ барыу килешмәй тип уйлап, Илмырҙа карт тәпәнгә бал тултырып алды.* Ә. Вәли. *Күстәнәс бит ул тән аҙығы түгел, йән аҙығы! Уға кеше үҙенең йылы хистәрен.., ихтирамын ҡушып ебәрә.* Р. Ғабдрахманов. **Ҡуян күстәнәсе** ҡырҙан кире урап ҡайтҡан ашамлыҡ.

**КҮСТӘРЕҮ** *к. диал. көлк.* Ҡыйратыу. *Ни күстәрәһең туған?*

**КҮСӘ** [*рус.* куча] *и.* **1.** Ун көлтәлек көлтә өйөмө (ете көлтәне текә ултыртып, өсөһөн өҫкә һалалар).

**2.** *диал. ҡар.* **көшөл** [2].

**КҮСӘБӘ** *с.* Күсеп йөрөгән, ултыраҡ булмаған; күсмә. *Күсәбә халыҡ.* ■ *Һалҡын ҡыш, ҡара урмандар күсәбә ата-бабаларыбыҙҙы ултыраҡлыҡҡа күсергә .. зарурат иткән.* Ғ. Хөсәйенов.

**КҮСӘГИЛЕШЛЕ** *с. шул уҡ* **күсә килгән** (*ҡар* **күсеү** 3.)

**КҮСӘГИЛЕШЛЕК** *и.* Берәүҙән икенсегә, быуындан-быуынға күсә килеү күренеше. *Теориялағы әҙмә-әҙлелек һәм күсәгилешлек һис һүҙһеҙ уны ижади үҫтереүҙе .. күҙҙә тота.* «Совет Башҡортостаны», 1985, 16 октябрь.

**КҮСӘК** *ымл. диал.* Ҡапыл ҡурҡҡанда, аптырап ҡалғанда әйтелә; абау.

**КҮСӘКӘЙ** *и. диал. ҡар.* **сүрәкә** [2]. *Күсәкәй һуғыу.*

**КҮСӘМ** *и.* **1.** Күс [1] (2 мәғ.) башында барған кеше; юл башлаусы.

**2.** *күсм. иҫк.* Хәрби эш башлығы, хәрби етәксе. *Илдең оло түрендә байман табып ултырма, күсәм бул һин, Иҙеүкәй.* «Иҙеүкәй менән Мораҙым».

● *Һөйләй-һөйләй сәсән булырһың, йөрөй-йөрөй күсәм булырһың.* Мәҡәл.

**КҮСӘН** [*рус.* кочан] *и.* **1.** Кәбеҫтәнең бөрөлгән тығыҙ өлөшө, башы. *Кәбеҫтәнең күсәне тығыҙланған.*

**2.** Кәбеҫтәнең эсендәге ҡаты үҙәге. *Күсәнен ҡалдырып турау.* **Күсәнгә ултырыу** *ҡар.* **күсәнләнеү.**

**3.** *диал.* Ҡамыш екәне.

**КҮСӘНЛЕ** *с.* Күсәне булған. *Ҙур күсәнле кәбеҫтә.*

**КҮСӘНЛӘНЕҮ** *к.* Күсәнгә (1 мәғ.) төрөлөү. *Кәбеҫтә һыу аҙ булғанда күсәнләнә алмай, йомшаҡ булып үҫә.*

**КҮСӘР** *и.* **1.** Тәгәрмәс кейҙерә торған үҙәк. *Алғы күсәр. Артҡы күсәр. Арба күсәре. Һабан күсәре.* ■ *Урман юлы тар ғына, күсәр баштары юл ситендәге .. ағастарға эләгә.* Ж. Кейекбаев. *Комбайнда, вагонда тәгәрмәстәр, күсәрҙәр тимер менән ҡоростан.* Ғ. Ғүмәр. / Машиналарҙағы әйләнмәле механизмдарҙы кейҙерә торған үҙәк. *Шестерня күсәре.*

**2.** *күсм.* Үҙ тирәһендә әйләнгән күк есемдәренең фарази үҙәге. *Күсәренән сығыр төҫлө булып, тетрәп торҙо хатта ер шары.* Ғ. Әмири.

♦ **Донъя күсәре** йәшәүҙең, тормоштоң тотҡаһы, төп шарты. *Кендектәрем һиңә берекмәгән, һиндә түгел донъя күсәре.* Н. Нәжми. **Күсеп барғанда күсәр башы тейгән** ҡан туғанлығы булмаған кеше хаҡында әйтелә. **Күсәр баштары бәрелеү** ҙур һүҙгә килеү, талашыу.

**КҮСӘРКӘ** [*рус.* кочерга] *и. диал.* Тәртешкә.

**КҮСӘТ** *и. диал. ҡар.* **сүрәкә** [2]. *Күсәт һуғыу.*

**КҮҪТӘЙЕҮ** *к. диал.* Лапшайыу, йәйелеү.

**КҮҪӘ** *с.* Һаҡал-мыйығы булмаған йәки бик һирәк булған. *Күҫә кеше.* ■ *[Базарком] күҫә — һаҡал да юҡ, мыйыҡ та сыҡмаған. Ир кешелә һаҡал менән мыйыҡ булмаһа, мөгөҙһөҙ үгеҙ кеүек була ул.* С. Агиш.

**КҮҪӘК** *и.* Йыуан ауыр таяҡ.

♦ **Күҫәк күтәреү** 1) һуғышырға ынтылыу; 2) талау, әрләү. *Татар зыялыйҙары араһында «әҙәбиәт кисәләре» яһау мәсьәләһе ҡуҙғалд. Был хәрәкәткә татар байҙары, муллалары күҫәк күтәреп ҡаршы сыға.* Д. Юлтый.

● *Ҡымыҙға бешкәк кәрәк, ишәккә күҫәк кәрәк.* Мәҡәл.

**КҮҪӘККӘ-КҮҪӘК:** **күҫәккә-күҫәк килеү** нимәләр өсөн бик ныҡ даулашыу, һуғышыу. *Үҫәргәндәр ҡыпсаҡтар менән элек-электән тыныштмай. Йә .. йәйләү өсөн күҫәккә-күҫәк килә, йә бер-береһенең ҡыҙын урлап өҙөшәләр.* Ә. Хәкимов.

**КҮҪӘКЛӘҮ** *к.* Күҫәк менән һуғыу, туҡмау.

**КҮҪӘКТӘЙ** *с.* Оло, ҙур; уҫлаптай. *Күҫәктәй балаһын алдына алып ашата.*

**КҮҪӘҮ** *и. диал.* Тәртешкә.

**КҮТЕР** *и.* Өҫтө ҡалын үлән менән ҡапланып, аҫты һыу булғанлыҡтан һиңкелдәп ятҡан батҡыл урын. *Күтер бесәне. Күтергә батыу. Күтергә убылыу.* ■ *Бәләкәй генә инеш булып ағып сыҡҡан Ҡаранйылға .. урыны-урыны менән күтер аҫтына инеп юғала.* Т. Сәғитов. / Әҙәм үткеһеҙ батҡаҡ. *Яуа торғас, аяҡ аҫтары күтергә әйләнде, баҫыр әмәл юҡ.* И. Ғиззәтуллин.

**КҮТЕРЛЕ** *с.* Өҫтө үлән менән ҡапланып күтергә әйләнгән, батҡыл. *Күтерле һаҙлыҡ. Күтерле урын.* ■ *Ауылдан түбән, йылға буйында ҙур һаҙлыҡ бар. Һаҙ упҡынлы, күтерле: ситенәрәк барып аяҡ менән баҫһаң, һелкенеп тора.* Ж. Кейекбаев.

**КҮТЕРЛЕК** *и.* Күтер булған ер, күтерле урын. *Һауа дымлы һалҡын булып китте. Аяҡ аҫты дерелдәп тора — күтерлек күрәһең.* Ф. Мәҡсутов. *Һуҡмаҡ илтә бик йыш күтерлеккә, йырып сыға алмаҫ батҡаҡҡа.* Х. Кәрим.

**КҮТЕРЛӘНЕҮ** *к.* Күтергә әйләнеү, күтерле булыу. *Кем белгән инде был йәһәннәм соҡоронoң күперҙәре сереп, кисеүҙәре күтерләнеп бөткәнен.* Ғ. Вәлиев.

**КҮТКӘРЕ** *с. һөйл. ҡар.* **кире** [1].

**КҮТӘН** *и. анат.* Эсәктең арт юлға килеп бөткән һуңғы өлөшө; тура эсәк.

♦ **Күтәнгә талашыу** туй йолаһы (егеттең атаһы килтергән малдың тура эсәген алып сепрәккә төйнәйҙәр; ҡыҙҙар һәм еңгәләр араһында ошо нәмә өсөн тартыш башлана; тартышта ҡатнашыусыларға төрлө тәм-томдан бүләк әҙерләп ҡуялар). **Күтән һурпаһы эсеү** нужа күреү. **Үгеҙ эйәһенә күтән юҡ** хужа кеше үҙ әйберенән ҡоро ҡалғанда әйтелә.

**КҮТӘРГЕЛӘҮ** *к.* **1.** Һирәк-һаяҡ күтәреү, иңгә алыу (мәҫ. йөктө).

**2.** Һирәк-һаяҡ ҡалҡытыу, күтәреү (мәҫ. башты, аяҡты).

**КҮТӘРГЕС** *и.* Йөк күтәрә торған машина. *Күтәргестәр йорт өҫтөнә кирбестәрҙе күтәрә.* С. Кулибай.

**КҮТӘРГЕҺЕҘ** *с.* **1.** Физик көс етмәҫлек, ауыр. *Ҡаратал аҫты суҡ муйыл, күтәргеһеҙ күп быйыл* (Халыҡ йырынан).

**2.** Рухи көс етмәҫлек, ҙур. *Әҙәм күтәргеһеҙ ауыр ҡайғы.* ■ *Йәп-йәш башыма күтәргеһеҙ хурлыҡты ҡаплап.., мин айҙар буйы өйҙән сыҡмай яттым.* З. Биишева.

**КҮТӘРЕЛЕП-БӘРЕЛЕҮ** *к.* Ныҡ көйөп, борсолоп, өҙгөләнеү; туҙыныу. *Ғәбдрахман хәҙрәт, .. йәштәр ҡарарын ишеткәс, күтәрелеп-бәрелде. Ашау-эсеүен онотто.* И. Насыри.

**КҮТӘРЕЛЕҮ** *к.* **1.** *төш. ҡар.* **күтәреү** 1, 3—7. *Күтәрелгән тоҡ. Күтәрелгән яға. Күтәрелгән аяҡ. Күтәрелгән байраҡ.* ■ *Йыйылыштарҙың .. береһендә лә малсылыҡтағы эштәрҙе яҡшыртыуға бәйле мәсьәлә күтәрелмәгән.* «Совет Башҡортостаны», 1985, 29 ноябрь.

**2.** Ҡуҙғалып үрә тороу; ҡалҡыу. *Күтәрелеп баҫыу. Урындан күтәрелеү.* ■ *[Фатима] башын ҡалҡытып тирә-яҡҡа ҡарамаҡсы булды, ләкин зыңҡып ауыртҡан башы, һыҙлаған тәне күтәрелергә ирек бирмәне.* С. Ханов. / Ауырыуҙан тороу; аяҡҡа баҫыу. *[Миңнулла:] Ҡыҙыбыҙ аяғын һындырҙы .. Күтәрелә аламы, юҡмы инде.* Р. Ғабдрахманов.

**3.** Ниндәй ҙә булһа берәй эшкә дәррәү ҡуҙғалып, берҙәм тотолоу. *Һөжүмгә күтәрелеү.* ■ *Күтәрелде совет халҡы үҙ тупрағын һаҡларға.* Ҡ. Даян.

**4.** Ҡуҙғалып осоп китеү, һауаға менеү. *Самолёт күтәрелде. Вертолёт юғары күтәрелде.* ■ *Зыярат өҫтөнән, бөтәһе бер юлы ҡаркылдашып, ҡарғалар күтәрелде.* Ә. Байрамов.

**5.** Бейегерәк кимәлгә килеү; ҡалҡыу. *Ямғыр күп яуҙы, йылға-күлдәрҙең һыуы күтәрелде.*

**6.** Юғары ергә ҡалҡыу; менеү. *Тауға күтәрелеү.* ■ *[Рәхмәй] кәртә аратаһына баҫып, күтәрелеп, эстә торған атты .. һөйҙө, ялдарын тараны.* Ғ. Ғүмәр. / Юғарыраҡ хәлгә килеү; ҡалҡыу. *Ишектең киләһе күтәрелеү булды, Яҡуп уны шарт тибеп асты ла .. эскә атланы.* Б. Бикбай. *[Кейеҙбай:] Минең ҡулым ҡаймыҡҡан, күтәрел-*

*мәй* (Әкиәттән). / Юғарыға ашыу. *Был тау, ҡая таш кеүек теп-текә булып күтәрелеп тора, ти* (Әкиәттән). / *күсм.* Юғарыраҡ дәрәжә алыу, үрләү. *Түбәндән күтәрелгән кеше.*

**7.** Горизонт өҫтөнә сығыу, ҡалҡыу (Ай, Ҡояш, йондоҙ, болот һ. б. ҡарата). *Ай күтәрелде.* ■ *Ай урынына Ҡояш күтәрелер, һығыш бөткән көндө кис менән.* Ғ. Әмири. / Өҫкә, һауаға ашыу, менеү. *Беҙ сәй эсеп сыҡҡансы томан күтәрелгән ине.* Д. Юлтый. *Төтөн юғары күтәрелһә аяҙ, ергә ятһа яуын була.* Һынамыш. / Һауаға менеү, ҡалҡыу; туҙыу. *Саң күтәрелде. Сып-сар һауаға күтәрелде.*

**8.** Буйға ҙурайыу; үҫеү. *Май һалҡынса килде. Үлән күтәрелеп өлгөрмәне.* Я. Вәлиев. / *күсм.* Һөҙөмтәлерәк хәлгә килеү; үҫеү. *Хеҙмәт етештереүсәнлеге күтәрелде.* ■ *Сафа әҙәби китаптар уҡыны, яңы күтәрелеп килгән татар театры менән ҡыҙыҡһынды.* Б. Бикбай. / *күсм.* Кимәл-дәрәжә йәһәтенән юғарыраҡ хәлгә килеү; үҫеү. *Аң белем күтәрелә.* ■ *[Әхмәтйән:] Йә, иген ни хаҡ тора баҙарҙа? Аҙыраҡ күтәрелгән тигәндәй булалар.* Һ. Дәүләтшина.

**9.** Ҡалҡып сығыу, барлыҡҡа килеү. *Тик ҡурай һыҙғырған сахра буйлап күтәрелде яңы ҡалалар.* Ғ. Сәләм. / Үҙе эйәреп килгән исемдән аңлашылған эш-хәлдең булыуын, башланыуын белдерә. *Бола күтәрелде. Туфан күтәрелде. Ғауға күтәрелде.* ■ *Төн урталары еткәс, ҡапыл ел-дауыл күтәрелеп, ағас баштары шаулай башлаған* (Әкиәттән).

**10.** *күсм.* Дәртләнеү, рухи яҡтан үҫеү. *Гөлбикә апай мине маҡтап ҡуя.. Мин бөтөнләй күтәрелеп китәм.* Д. Юлтый. *Ҡарттарҙың күңелдәре күтәрелеп, йөҙҙәре йылмая.* Ш. Шәһәр.

◆ **Йөрәк күтәрелеү** йөрәк йыш-йыш тибеү, йөрәк ярһыу.

**КҮТӘРЕЛЕШ** *и.* **1.** Алға барыш, үҫеш. *Һуңғы йыл эсендә башҡорт драматургияһы күтәрелеш осорона ингәйне.* Р. Ниғмәти. *Ниндәй күтәрелеш, ниндәй эш, быуаттарға һыймай үҙгәреш.* Х. Ғиләжев.

**2.** Көрәш өсөн ҡуҙғалған күмәк хәрәкәт. *Ҡоралы күтәрелеш. Революцион күтәрелеш.* ■ *Өс йөҙ йыл буйы бер-бер артлы ҡабынып торған башҡорт күтәрелештәре .. СССР халыҡтарының дөйөм тарихында ла мөһим героик биттәрҙе тәшкил итә.* И. Аҡманов.

**КҮТӘРЕМ** *и.* **1.** Бер күтәреп алырлыҡ күләм. *Бер күтәрем утын.*

**2.** Сапҡан бесәндең бер сәнсеп алырлыҡ итеп һалынған өйөмө. *Ҡыҙҙар пакустағы бесәнде күтәремдәргә өйә. Малайҙар күтәремдәрҙе һөйрәтмәгә тейәй.* Ф. Исәнғолов. / Урғыстан бер йыйып ташлап ҡалдырған ашлыҡ өйөмө. *Күтәремдә ятҡан иген. Ашлыҡ уңған, бер күтәремдән ике көлтә сыға.*

**КҮТӘРЕМЛӘҮ** *к.* Бесәнде бер сәнсеп күтәрерлек ваҡ-ваҡ өйөмдәргә өйөү.

**КҮТӘРЕНЕҮ** *к.* Ҙур-ҙур итеп күтәреү; йөкмәнеү. *Күтәренеп килеп инеү.* ■ *[Ғәләү] йәйелгән урынды ҡултығы аҫтына ҡыҫтыра ла, күтәренеп аш өйө янына сыға башлай.* Б. Бикбай.

**КҮТӘРЕНКЕ** *с.* **1.** Ғәҙәттәгенән, тейешленән бер аҙ юғары. *Үләндән саҡ ҡына күтәренке ҡыуаҡ.*

**2.** *күсм.* Ғәҙәттәге кимәл-дәрәжәнән бер аҙ юғары. *Күтәренке температура. Күтәренке талапсылыҡ.*

**3.** *күсм.* Дәртле, күсле уй-тойғо менән рухланған; киреһе төшөнкө. *Күтәренке күңел. Күтәренке тауыш.* ■ *Йырым менән күңелем күтәренке.* Ә. Атнабаев.

**КҮТӘРЕНКЕЛЕК** *и.* Күтәренке хис. *Күтәренкелек менән эшләү.* ■ *Кәңәшмә айырыуса күтәренкелек менән барҙы.* Ә. Вәли.

**КҮТӘРЕҢКЕРӘҮ** *к.* Күтәрә (1, 3—5 мәғ.) бирeү, күтәрә төшөү. *Яғаны күтәреңкерәү.* ■ *Судья үҙенең тәпәш, йомро кәүҙәһен күтәреңкерәп .. , ҡулдарын эре генә итеп алға һуҙып, хөкөмдө уҡый башланы.* Ғ. Дәүләтшин.

**КҮТӘРЕҮ** *к.* **1.** Ауырлығы булған нәмәне ҡулға, иңгә алыу; тотоу, йөкмәү. *Күтәреп алыу. Күтәреп йөрөү. Күтәреп килеү. Сумаҙанды күтәреү. Тоҡто күтәреү.* ■ *Кабинанан йәш балаһын .. күтәреп бер ҡатын төштө.* Р. Солтангәрәев. / *күсм.* Үҙ хәстәреңә, үҙ өҫтөңә алыу; йөкмәү. *Туй сығымын күтәреү.* ■ *[Баяр-Шүркәгә:] Ниткән саҡта юл расходын да үҙем күтәрермен.* М. Тажи. / *күсм.* Һуға алмаған кәртте алыу. *Тузды күтәреү.*

**2.** Ауырлығы булған нәмәне аҫҡа еңдермәй тотоу. *Ерҙең ҡатылығына, мине күтәреүенә шөбһә ҡалмағас, торҙом, аяҡҡа баҫтым.* Д. Юлтый. *Ағастар емештәрен саҡ күтәреп, һығылып ултыра.* Ә. Хәкимов. / *күсм.* Ниҙеңдер тәьҫирен еңерлек көс табыу; түҙеү, сыҙау. *Маҡтағанды күтәрә белеү.* ■ *[Миңнеғәле:] Власть харап итә уны [Байгильдинды], күтәрә алмай.* Х. Ғиләжев. *Әсә күңеленән көслөһө юҡ ерҙә, ул бөтәһен дә күтәрә.* Ә. Вахитов. / *күсм.* Ниндәйҙер бер хәлдә булышлыҡ итеү, ярҙам күрһәтеү; күтәрмәләү. *Дуҫтарҙың ярҙамы күтәрҙе.*

**3.** Үрә торғоҙоу; ҡалҡытыу. *Бағананы күтәреү. Яғаны күтәреү. Телевизор антеннаһын күтәреү.* / Йыйып, ҡороп ултыртыу (өйҙө, бураны). *Келәт күтәреү. Өй күтәреү.* ■ *Йәйләүгә сыҡҡан кешеләр [тәүҙә] иң ҡарт ағаның тирмәһен күтәргән.* Ғ. Дәүләтшин. / Әйләп аяҡҡа баҫтырыу. *Һөжүмгә күтәреү.* ■ *Ленин! Үҙен күрмәһәк тә, ошо исем беҙҙе ҙур көрәшкә күтәрҙе.* Б. Ишемғол.

**4.** Бейегерәк итеү; ҡалҡытыу. *Ҡойманы күтәреү. Юлды күтәреү.*

**5.** Юғарыраҡ ергә алып менеү; мендереү. *Өй башына күтәреү. Байраҡты манара башына ҡуйҙылар.* / Юғарыраҡ хәлгә килтереү; ҡалҡытыу. *Аяҡты күтәреү.* ■ *[Эт] .. моронон күтәреп еҫкәнде.* Һ. Дәүләтшина. / *күсм.* Үрләтеү, үҫтереү. *Кешене хеҙмәт күтәрә.* ■ *[Сәүбән — Дубовка:] Беләһеңме, мине Ишембайҙа саҡта күтәреп ташланылар.., треска, трестан — комбинатҡа килдем.* К. Мәргән. / *күсм.* Дәрт биреү, рухландырыу (күңелгә ҡарата). *Йыр йырлауы беҙгә тәсбих түгел, йыр йырлауы күңел күтәрә* (Халыҡ йырынан).

**6.** Һауаға ҡалҡытыу, туҙҙырыу. *Ҡойон күтәреү. Саң күтәреү. Туҙан күтәреү. Ел сып-сарҙы һауаға күтәреп, ойоҡһота.*

**7.** *күсм.* Һөҙөмтәләрәк хәлгә килтереү; үҫтереү. *Хеҙмәт етештереүсәнлеген күтәреү. Игендең уңышын күтәреү. Техниканың ролен күтәреү.* ■ *[Булат — Тимергә:] Мактайһың колхозды, күтәрмәк булаһың, ә кешеләрең унда уның исемен һата.* Б. Бикбай. / Кимәл-дәрәжә йәһәтенән юғарыраҡ итеү; үҫтереү. *Белемде күтәреү.* ■ *Петр Батшаның үҙ кулынан алған грамота кағыҙы ил-йорт ҡаршыһындағы уның [Алдарҙың] абруйын күтәреп ебәрҙе.* Ғ. Хөсәйенов.

**8.** Үҙе эйәреп килгән исемдән аңлашылған эш-хәлде булдырыуҙы, башлап ебәрҙеүҙе аңлата; сығарыу. *Восстание күтәреү. Ғауға күтәреү. Яньял күтәреү.* ■ *Ҡунактар алдында тауыш күтәрмәҫ өсөн Бибикамал еңгә [Гәрәйгә] асыулы һүҙҙәрен әйтмәне.* А. Карнай.

**9.** Башлап ғәмәлгә ҡуйыу, ҡуҙғатыу (һүҙ, мәсьәлә тураһында). *Хеҙмәт етештереүсәнлеген арттырыу тураһында һүҙ күтәреү.* ■ *Новиков күтәргән мәсьәлә минең өсөн хәл ителмәй торған утопик мәсьәлә ине.* Д. Юлтый.

**10.** Берәй эш, һүҙҙе хуплап ҡаршы алыу, уға ҡушылыу. *Киноға барайык,— тип кыуанып китте Хөрмәт.— Барайык! — тип күтәреп алды Шәмсиә.* З. Биишева. *Әй, дуҫтарым йыр башлайым, күтәреп ебәрегеҙ* (Халыҡ йырынан).

♦ **Баш күтәрмәй** ял белмәй, туктауһыҙ. *Баш күтәрмәй эшләү. Баш күтәрмәй укыу.* **Күтәреп алып йөрөү** бик ҡәҙерләү. **Күтәреү таҡтаһы** *кар.* **такта. Танау күтәреү** *кар.* **танау. Төп күтәрә** *һөйл.* 1) тотош бер юлы, бөтөргәнсә. *Төп күтәрә эсеү. Төп күтәрә һөйләп биреү;* 2) бөтөнләй, бөтөнләйгә. *[Табибә әбей:] Әле генә ҡайтып күҙеңә күренһендәр ҙә, .. икеһе лә бер юлы төп күтәрә сыкһын да китһендәрсе.* З. Биишева. **Төп күтәрә һуғыу** *һөйл.* 1) бөткәнсе эсеү; 2) пыран-заран килтереү. *Революция [Сибай ағайҙың] аттарын да, ..хыялдарын да төп күтәрә һукты.* И. Насыри.

● *Һукмаҫ ҙур күтәрер.* Әйтем. *Яңыны иҫке күтәрә.* Әйтем.

**КҮТӘРЕШЕҮ** *к. урт. ярҙамл. кар.* **күтәреү** 1, 3—5. *Күтәрешеп алып килеү. Өй күтәрешеү. Туй сығымын күтәрешеү. Хужалыкты аякка баҫтырыуҙа ярҙам итеү, күтәрешеү.*

**КҮТӘРЛӘНЕҮ** *к. диал.* Күтәренеү.

**КҮТӘРМӘ** [1] *и. кар.* **үксә** 2. *Бейек күтәрмә.*

**КҮТӘРМӘ** [2] *и.* Өйгә инә торған такта баҫкыс. *Асык күтәрмә. Ябыулы күтәрмә.* ■ *Ишеккәйең тар — инә алмам, күтәрмәң бейек — менә алмам* (Сеңләүҙән).

♦ **Күҙе ҡара күтәрмәгә йығылған** йәберле кеше үҙенән дә ныҡ йәберлене рәнйеткәндә әйтелә.

**КҮТӘРМӘЛЕ** *с.* Үксәһе, күтәрмәһе булған. *Күтәрмәле итек.* ■ *Мөғәллимәнең аяғында .. оҙон ҡуныслы, бейек күтәрмәле ҡара ботинка.* З. Биишева.

**КҮТӘРМӘЛЕКЛӘҮ** *к. диал.* Күтәрмәләү.

**КҮТӘРМӘЛӘҮ** *к.* **1.** Күтәреп алғандай итеп хөрмәтләү. *[Егет] батшаға барып һөйөнсөләй. Батша һөйөнсөһөнә кыҙын бирергә була. Шунан уны батша кейәүе лә, батша кейәүе, тип, күтәрмәләп алып китәләр* (Әкиәттән).

**2.** Кемдеңдер эшен, һүҙен ҡеүәтләү, хуплау. *Кешенең һүҙен күтәрмәләү.* ■ *Ҡыҙрас ни әйтһә, шуны тыңланы ул, уның шаян эштәрен һәр ваҡыт хуплап, күтәрмәләп кенә торҙо.* З. Биишева.

**3.** Дәрт, көс биреү, ярҙам күрһәтеү. *Ике өйҙөң карттарын ул [Сабира] ғына күтәрмәләп йөрөй.* Һ. Дәүләтшина.

**КҮТӘРМӘС** *с. диал.* Балиғ булмаған, ваҡ. *Күтәрмәс балалар.*

**КҮТӘРТЕҮ** *к.* **1.** *йөкм. кар.* **күтәреү** 1, 3—6. *Токто кешенән күтәртеү. Өй күтәртеү. Байраҡ күтәртеү.*

**2.** Астан хәлһеҙләнеп, тора алмаҫ булыу (малға ҡарата). *Әхмәҙиҙең аты яҙ башынан үк күтәртә башлай һәм күк үләнгә аяҡ баҫмайынса төҫ алмай.* Ж. Кейекбаев.

**КҮТӘРӘМ** *и. диал.* Күтәрткән мал.

● *Аҡһаҡ күтәрәмдән якшырак.* Әйтем.

**КҮҺӘҮ** *с. диал.* **1.** *кар.* **биҙәү** [2]. *Күһәү катын. Күһәү һыйыр.*

**2.** *кар.* **күҫә.**

**КҮШЕГЕҮ** (күшек*ә*) *к.* Ныҡ һыуланып өшөү. *Күшегеп бөтөү.* ■ *Көнө яуа, төнөн яуа.. Ер күшеккән, ер ҡаңғыра.* М. Кәрим. *Өҫтән ямғыр яуа. Кешеләр, аттар нык күшеккән.* С. Әлибаев. *Күшеккән һары япрактар ергә һибелә.* Н. Нәжми.

♦ **Күшеккән тауыҡ** *кар.* **тауыҡ.**

**КҮШЕКТЕРЕҮ** *к.* **1.** Һыуландырып ныҡ өшөттөрөү. *Бер туктауһыҙ ямғыр һибәләй, күшектереп һөйәктәргә тиклем үтә.* Һ. Әсәдуллин. *Күшектергес елле-ямғырлы көндәр башланып киткәс, йәш колондарға бауырлык бәйләргә булдылар, ти* (Әкиәттән).

**2.** *эйһ. ф. кар.* **күшегеү.** *Ямғыр аҫтында ҡалдык. Күшектерҙе.*

**КҮШЕРЕЛЕҮ** *к.* **1.** Ныҡ һыуланып, итәк-ең сосолоу, ҡотһоҙланыу. *Күшерелеп килеп инеү.* ■ *Электән һыуға төшкән тауык йөнөнә окшаған хәҙрәттең туны канауға төшкәндән һуң тағы ла күшерелә төштө.* И. Насыри.

**2.** Киң булып йәйелеү, эркелеү (нимәнеңдер өҫтөнә сыккан, йәки түгелгән шыйыҡлыҡҡа ҡарата). *Боҙ өҫтөнә шәре сыккан, күшерелеп ята.*

**КҮШКӘ** *и.* Ҡайындың туҙы аҫтындағы йомшаҡ ҡатлам.

**КҮШКӘЙ: күшкәй япрағы** *диал.* дегәнәк япрағы (*кар.* **дегәнәк**).

**КҮШМӘК** *и.* **1.** Ҡайындың суғырмаҡлы ҡабығы.

**2.** *кар.* **күшкә.**

**КҮШТӘҮ** *и. диал.* Сөмгөл, сөмөкәй.

**КҮШӘ** [1] *[фарс.] и. иҫк. кит.* Урам. *Йыһандың һәр күшәһе бакса булды.* М. Ғафури.

**КҮШӘ** [2] *и. диал.* Шөйтө.

**КҮШӘГӘ** *и. диал.* **1.** Шаршау.

**2.** Ябынса.

♦ **Күшәгә башы** ҡыҙҙың ата-әсәһенә бирелгән бүләк.

● *Кейгән ыштанды кем күрә, күшәгәне ил күрә.* Мәҡәл.

**КҮШӘК** [*фарс.*] *и. иçк. кит.* Йәйге йорт; аласыҡ. *[Ҡарт] яҡындағы балыҡсылар күшәгенә барып, Татлыбайҙың ҡайҙа урынлашҡанын һорашып белде.* Ш. Шәһәр.

**КЫЛАНУК** [*рус.* колонок] *и. диал.* Һары шәшке.

**КЫРАНДАС** [*рус.* тарантас] *и.* Еңелгә йөрөй торған ҡупшы арба. *Көймәле кырандас. Ситәнле кырандас.* ■ *Кырандас бәүелеүенә Әлтәф ҡарттың .. йоҡоһо килде.* Ғ. Хәйри.

**КӘ** [1] [*гәр.*] *бәйл. иçк. кит.* Кеүек, һымаҡ.

**КӘ** [2] [*гәр.*] *а. иçк. кит.* Һинең, һине. *Кә бит шәрәфеңде зыярат итәйем.* М. Өмөтбаев.

**КӘБАБ** [*гәр.*] *и.* Тапалған иткә ярма, һарымһаҡ ҡушып ҡурған ашамлыҡ. *Кәбаб ҡурыу.*

♦ **Кәбаб булыу** үртәнеп, ҡара көйөү. *Беҙҙең илдәр алыç ҡалды, әсәм илап ҡалды. Һағынмаҡлыҡ бәгерҙәрем кәбаб булды* (Бәйеттән).

● *Уңған ҡатын арыш онон кәбаб итер.* Мәҡәл.

**КӘБАИР** [*гәр.*] *и. иçк.* Оло гөнаһ, енәйәт. *Ғәфү иткел уларҙы .. Улар ҡылған нисә төрлө кәбаир.* М. Ғафури.

**КӘБЕРСӘН** *и. диал.* Аҡ сәпсек (*ҡар.* **сәпсек**).

**КӘБЕÇТӘ** [*рус.* капуста] *и.* **1.** Япрағы ҡат-ҡат булып йомарланып үçкән йәшелсә. *Кәбеçтә орлого. Кәбеçтә рассадаһы. Кәбеçтә күсәне. Кәбеçтә ултыртыу.* **Сәскәле кәбеçтә** суҡланып торған башлы кәбеçтә.

**2.** Шул йәшелсәнең ашай торған аҡ япрағы. *Кәбеçтә ашы. Тоҙло кәбеçтә. Яңы кәбеçтә. Кәбеçтә һурпаһы.*

♦ **Диңгеҙ кәбеçтәһе** ашарға яраҡлы, шифалы диңгеҙ үләне. **Кәзә кәбеçтәһе** һутлы йыуан һабаҡлы, ҡалын ҡабырсаҡ япраҡлы, ҡыҙғылт суҡ сәскәле, арса һымаҡтар ғаиләһенә ҡараған тауташ үләне.

**КӘБИР** [*гәр.*] *с. иçк. кит.* **1.** Оло, ҙур.

**2.** (*баш хәреф менән*) Ир-ат исеме.

**КӘБИСӘ: кәбисә йылы** февраль айы 29 көндән килгән йыл. *Кәбисә йылы гәрәпсә өçтәлмәле йыл тигән һүҙ. Сөнки ундай йылдарҙы, февралгә бер көн өҫтәп, 366 көн тип иçәпләйҙәр.* «Совет Башҡортостаны», 1967, 31 декабрь.

**КӘБӘК** *и.* **1.** Игендең орлоғон ҡаплап торған осоҡ көп (һуҡҡанда, елгәргәндә, һурҙырғанда төшә). *Бойҙай кәбәге. Һоло кәбәге. Тары кәбәге.* ■ *[Елгәргес тә] көйләп, шатлыҡ йырлап, буранлатып кәбәк осора.* Ғ. Мәсғүт.

**2.** Бесән, һалам вағы. *Беҙ .. һалам күбәһендә уйнай башланыҡ. Бында рәхәт, тик елкәгә сәнскеле кәбәк кенә тула.* Ғ. Аллаяров.

**3.** *диал. ҡар.* **көрпә** [1] 1.

♦ **Кәбәк баш** аҡылһыҙ, ахмаҡ. *Әммә ҡыйын кәбәк башлы әҙәм булһа янында.* Ғ. Дәүләтов.

**КӘБӘКЛӘНЕҮ** *ҡ.* Кәбәккә әйләнеү; ваҡланыу.

**КӘБӘКЛӘҮ** *ҡ.* Кәбәккә әйләндереү; ваҡлау. *Һаламды тапап кәбәкләп бөтөү.*

**КӘБӘК-ҺӘБӘК** *и. йыйн.* Игендең төрлө сүп-сары. *Бураһында бөткән бар игендәр, ҡалған кәбәк-һәбәк, ваҡ-төйәк.* М. Ғафури.

**КӘБӘН** *и.* Ҙур, түңәрәк итеп, ослап һалған бесән йәки көлтә өйөмө. *Ҡышлау кәбән. Бесән кәбәне. Кәбәндәге ашлыҡ. Кәбән осо. Кәбән төбө. Кәбән ослау. Кәбән башында тороу. Кәбән һалыу. Кәбән ҡойғос.* ■ *Беҙ бесән йыйҙыҡ. Күбәләрҙе бергә өйөп, ҙур кәбән ҡойҙоҡ.* Ш. Бикҡол. **Аҙау кәбән** ҡышлаған, йыл ултырған кәбән. **Кәбән аяғы** һаҙмат ерҙә кәбән аçтына бүкәнләп ҡуйылған урындыҡ һымаҡ ҡоролма. *Кәбән аяғы яһау.* **Кәбән сыбығы** *диал. ҡар.* **башағас** 1. **Кәбән тағаны** кәбән эсенә ҡыуышлап ҡуйылған ағас. **Кәбән һикеһе** *диал. ҡар.* **кәбән аяғы.**

♦ **Кәбән баш** иләмһеҙ ҙур баш. **Кәбән башы** *һөйл.* түңәрәк икмәктең беренсе телеме; ҡыйырсыҡ. **Кәбән төбө** *һөйл.* түңәрәк икмәктең иң һуңғы телеме.

● *Кәбән күрмәгән кәбән ишеген әҙләгән.* Мәҡәл.

**КӘБӘНҠОШ** *и. диал.* Төйлөгән.

**КӘБӘНӘК** *и. диал.* Күҙ ҡабағы.

**КӘБӘРКӘ** [*рус.* каморка] *и. диал.* **1.** Мейес арты. / Өйҙә быҙау, бәрәс тотоу өсөн эшләнгән урын; көпкә. *Кәбәркәләге кәзә бәрәстәренең ара-тирә кертелдәтеп бесән көйшәгәне ишетеле.* М. Тажи.

**2.** Соландағы бүлмә; кәзәнкә.

**КӘБӘТӘ** *с. диал.* Әрпеш, бысраҡ. **Кәбәтәгә ҡатыу** кергә ҡатыу, ҡарағa ҡатыу.

**КӘГЕЗ** *с.* Ябыҡ, кәрһеҙ, бәләкәй кәүҙәле. *Кәгез кеше. Кәгез мал.* ■ *Ошо бәләкәс, кәгез генә ҡарттың ат өçтөндә .. ҡылыс уйнатып йөрөгәненә спортсмен егет ышана алманы, күрәһең.* Р. Солтангәрәев.

**КӘГЕЗЛӘНЕҮ** *ҡ.* Кәгезгә әйләнеү.

**КӘГЕТ** *и. диал.* Күкйөн.

**КӘГЕҮ** (кәк*e*) *ҡ. һөйл.* **1.** Һуғыу, ҡундырыу.— *Исемең кем? Әйт! — ти малай.— Ниңә кәрәк? — ти Әсғәт.— Кәрәкҡәнен бик белерһең, елкәңә берҙе кәкһәм.* С. Кулибай.

**2.** *күсм.* Араҡы эсеү; төшөрөү. *[Шәмсиә:] Ул, Яппар, әҙерәк кәккән, ятып торһон.* Б. Бикбай.

**3.** *күсм.* Һорамай алыу; сәлдереү.

**КӘҘҘАБ** [*гәр.*] *и. иçк. кит.* Алдаҡсы, ялғансы.

**КӘҘӘЛӘЙ** [*рус.* козули] *и. диал. ҡар.* **ашыҡ** [1] 2. *Кәҙәләй уйнау.*

**КӘЖЕҮ** *ҡ. диал.* **1.** *ҡар.* **мөнйөү** 3.

**2.** Әсенеү, көйөү.

**КӘЖКЕЛДӘҮ** *ҡ. һөйл.* Кәжк-кәжк итеп йүткереү, кәжк-кәжк килеү. *Кәжкелдеге сығыу.*

**КӘЖК-КӘЖК** *окш.* Ғыжылдабыраҡ йүткергән тауышты белдергән һүҙ. *Кәжк-кәжк итеү. Кәжк-кәжк килеү.*

**КӘЗАЛИК** [*гәр.*] *а. иçк.* Шулай, шулай уҡ. *Нә хурлыҡтыр туғандар, әй дуç-иштәр .. кәсепте тәрех итеп эшһеҙ ятыуҙар, кәзалик ярты сәйгә ер һатыуҙар* (Бәйеттән).

**КӘЗЕКЛӘҮ** *ҡ. диал.* Үсекләү.

**КӘЗИБ** [*гәр.*] *с. иçк. кит.* Алдыҡ, ялған.

**КӘЗӘ** *и.* Мамығы, һөтө һәм ите өсөн аçырала торған мөгөҙлө, ҡыçҡа ғына ҡойроҡло ваҡ мал. *Бәрән кәзә. Оло кәзә. Шешәк кәзә. Дебет кәзәһе. Кәзә дебете. Кәзә ҡымыҙы. Кәзә һөтө. Кәзә бәрәсе. Кәзә тәкәһе.* **Ҡыр кәзәһе** *диал.* ҡоралай.

♦ **Кәзә билете** *ҡар.* **билет. Кәзә кәбеçтәһе** *ҡар.* **кәбеçтә. Кәзә майын сығарыу** 1) беләк итен киçә һуғып ҡабартыу; 2) хәлдән тайҙырыу. *Урмандан ҡоро-һары һөйрәп алып ҡайтабыҙ. .. Бейек ярҙы менгәндә кәзә майҙарын сығара.*

Я. Вәлиев. **Кәзә мөгөҙө** йыла япраҡлы, ваҡ ҡына өйкөм сәскәле, ҡуҙаҡ емешле йылы яҡ ағасы һәм шул ағастың оҙон ҡара емеше. **Кәзә талы** *ҡар.* **тал. Кәзә төкөү** үсегеү. **Кәзә һаҡалы** ҡатмарлы сәскәләләр ғаиләһенә ҡараған, ҡыҫҡа ғына шыр һабаҡлы, һары суҡ сәскәле ашай торған үлән. *Арбап торҙо беҙҙе ҡашлаҡтарың әсе оҫҡоно, кәзә һаҡалы.. Беҙ аяҡҡа баҫтыҡ ул йылдарҙа, ана шулай ерҙән һут алып.* Х. Назаров.

**КӘЗӘКЕЙ** [*рус.* казакин] *и.* Ултыртма яғалы, оҙон еңле, эслəп, биллəп тегелгəн өҫ кейеме. *Биш билле кәзәкей. Бәрхәт кәзәкей. Сатин кәзәкей.* **Кәзәкей тун** кәзәкей һымаҡ итеп тегелгән тышлы тун.

**КӘЗӘЛӘНЕҮ** *к.* Үсегеп ҡарышыу; кирелəнеү. *[Мотал:] Ул бала-сағаның шул булыр инде: саҡ ҡына ел-ямғыр тейҙеме, кәзәләнергә тора.* М. Хәйҙәров. / *күсм.* Ыңғай ғына йөрөмәй, көйһеҙләнеү (машина, механизмдарға ҡарата). *[Гөлсәсәк:] Бынау үтеге кәзәләнә бит, әй.* Ш. Бикҡол.

**КӘЗӘНКӘ** [*рус.* казёнка] *и.* Соландағы бүлəкәй бүлмә; соланса.

**КӘЗӘ-ҺАРЫҠ** *и. йыйн.* Кәзә һәм һарыҡтар; ваҡ мал.

**КӘЙ** *и. диал.* Салғыны һапҡа беркетеп ураған ҡайыш.

**КӘЙГЕ** *и. диал.* Бағау.

**КӘЙД** [*ғәр.*] *и. иҫк. кит.* Мәкерле эш, хәйлә. *Яһилдарға тоткон ҡылма, хасидтарҙың кәйден һаҡла.* М. Өмөтбаев.

**КӘЙЕГЕҮ** (кәйек*ә*) *к. диал.* Бүгеү, биҙеү.

**КӘЙЕЛЕҮ** *к.* **1.** Ҡыялатып, урата килеп боролоу. *Кәйелеп осоу.* ■ *Һауаларҙа осҡан ай ҡарсыға, кәйелә-кәйелә килә ҡош күреп* (Халыҡ йырынан).

**2.** Боролғанда юлдан сығып, һарҡыуға тайып төшөү; һырғалау (санаға, саңғыға ҡарата). *Саңғы кәйелә.* ■ *Ҡоруҙәк соҡорона төшкән саҡта, сана кәйелеп, тәртә төбө өҙөлөп киткән.* Б. Бикбай.

**КӘЙЕЛЕШЕҮ** *к. урт. ҡар.* **кәйелеү** 1.

**КӘЙЕЛТЕҮ** *к.* **1.** Һарҡыуҙа йәки боролмала шыйғалатып юлдан сығарыу. *Ҡырын юл сананы кәйелтә.*

**2.** Ялпаҡ яҫы ташты һыу өҫтөнән һикертә-һикертә ебәреү; сәпәтеү. *Бәхетемде һынап ҡарайымсы — кәйелтәйем күлдә ахаҡ таш.* Ә. Әхмәтҡужин.

**КӘЙЕЛТМӘК** *и.* Сананы кәйелтә торған ҡырын ер. *Кәйелтмәккә барып төшөү.*

**КӘЙЕЛТМӘКЛЕ** *с.* Кәйелтмәге күп. *Кәйелтмәкле юл.*

**КӘЙЕН** [1] *с. диал. ҡар.* **кесе** 1. *Ул минән ике-өс йәшкә кәйен.*

**КӘЙЕН** [2] *бәйл. диал.* Һуң, һуңынан. *[Истебай:] Бынау көтөүҙе әйләп ҡуйғандан кәйен, ауылға барып, тамаҡ туйҙырайым, тип китеп барамын.* Һ. Дәүләтшина.

**КӘЙЕҮ** *к. һөйл.* Йән көйөү. *Үткән эшкә кәйеп ни файҙа.* / Йән көйөп әрләү.

**КӘЙЕФ** [*ғәр.*] *и.* **1.** Эске рухи хәл, күңел торошо. *Яҡшы кәйеф. Кәйеф боҙолоу. Кәйеф насар булыу.* ■ *«Кәйеф нисек?» — тиҙәр күршеләрең, «Кәйеф шәпме?» — ти дуҫ-туғаның. Улар кәйефен боҙмаҫ өсөн ҡайсаҡ: «Кәйеф бик шәп!» тигән булаһың.* С. Кулибай.

**2.** Күңел күтәренкелеге; ҡәнәғәтлек. *Алғы рәттән бер урын алып, йәйелеп ултырып [Ташбулатов] кәйеф менән тартырға тотонды.* И. Насыри. / Кешенең үҙен яҡшы һиҙеүе, күңел теүәллеге. *Кәйеф килеү.* ■ *Аҡбашҡа ул [Азаматов] аҙаҡ барырға булды. Бөгөн уның ваҡыты ла, кәйефе лә юҡ ине.* Ә. Вәли. **Кәйеф бөтөү** (*йәки* **китеү, ҡырылыу, төшөү**) кәйеф насарланыу, күңелһеҙләнеү. *Һантауҙы күтәргәйнем, балыҡ ысынлап та юҡ. Кәйефем ҡырылды.* Н. Мусин. *Кәйефе китеп, йәш ағыҙып болоттар йөрөй туҙып.* Р. Бикбаев. **Кәйефте бөтөрөү** (*йәки* **ебәреү, ҡырыу, төшөрөү**) яҡшы кәйефте юҡҡа сығарыу, кәйефте боҙоу. *Аҙ түгел әле, аҙым һайын кәйеф ҡыра торған сәбәптәр.* С. Кулибай.

♦ **Кәйеф ҡороу** уйнап-көлөп күңел асыу.

**КӘЙЕФЛЕ** *с.* Күтәренке күңелле; шат. *Ғәйшә бөгөн иртәнсәктән үк кәйефле булды. Кешенең кәйефе яҡшы икән — эше лә ырай.* Ә. Вәли.

**КӘЙЕФЛӘНДЕРЕҮ** *к.* Кәйефле итеү. *Кешене кәйефләндереү.*

**КӘЙЕФЛӘНЕҮ** *к.* Яҡшы кәйефле булыу, ҡәнәғәтлек кисереү. *Шәриф бер аяғын алға һуҙып, .. бик кәйефләнеп, тамам шатлыҡ менән тирләп сәй эсте.* М. Ғафури. *Ҡанатланып, кәйефләнеп ҡайттым өйгә.* Н. Нәжми.

**КӘЙЕФ-САФА** *и. йыйн.* Уйын-көлкө, рәхәтлек. *Өйрәнсек ҡалған гүмерен батша һарайында йәшәп, кәҙер-хөрмәттә, кәйеф-сафала уҙғарған.* З. Биишева.

♦ **Кәйеф-сафа ҡороу** уйнап-көлөп күңел асыу.

**КӘЙЕФ-ХОЗУР** *и. йыйн. ҡар.* **кәйеф-сафа.** *Ултырҙылар кәйеф-хозур ҡороп, ҡара-ҡаршы түңәрәк өҫтәлдә.* М. Тажи.

**КӘЙЕФ-ХӘТЕР** *и. йыйн.* Кешенең кәйефе һәм хәл-әхүәле.— *Туташ, кәйеф-хәтерегеҙ хушмы? — тигән булам.— Арыу әле,— ти Зөләйха.* Т. Йәнәби.

**КӘЙЕФҺЕҘ** *с.* Насар кәйефле; асыулы, күңелһеҙ. *Кәйефһеҙ йөрөү. Кәйефһеҙ саҡ.* ■ *Ләлә .. походтан бик кәйефһеҙ ҡайтып керҙе.* Т. Арслан.

**КӘЙЕФҺЕҘЛЕК** *и.* Кәйефһеҙ, күңелһеҙ хәл. *Кәйефһеҙлек — күңел бушлығы ул .. Юҡ ул — хатта рухи имгәнеү.* С. Кулибай.

**КӘЙЕФҺЕҘЛӘНДЕРЕҮ** *к.* Кәйефһеҙ итеү. *Кешене кәйефһеҙләндереү.*

**КӘЙЕФҺЕҘЛӘНЕҮ** *к.* Күңелһеҙ хәлгә килеү; күңелһеҙләнеү. *[Сөнәғәттең] үҙенә атап хат яҙмағаны өсөн Салиха бер аҙ кәйефһеҙләнде.* Ж. Кейекбаев.

**КӘЙЕФ-ШӘРИФ** *и. йыйн. ҡар.* **кәйеф-хәтер.**

**КӘЙКЕ** *с. диал.* Ҡайҡы. *Кәйке танау.*

**КӘЙКӘЙЕҮ** *к. диал.* **1.** Кәксәйеү. *[Хәкимдең] электән алға сығыбыраҡ торған эйәге тағы ла нығыраҡ ослайып кәйкәйгән.* Я. Хамматов.

**2.** Ҡайҡайыу. *Артҡа кәйкәйеү.*

**КӘЙКӘЙТЕҮ** *к. диал.* Кәксәйтеү.

**КӘЙКӘЛӘК** *с. диал.* Кәйелтмәкле.

**КӘЙКӘЛӘТЕҮ** *к. диал. ҡар.* **кәйелтеү** 1.

**КӘЙКӘЛӘҮ** *к. диал. ҡар.* **кәйелеү** 2.

**КӘЙКӘН** *и. диал.* Ҡылансыҡ.

**КӘЙКӘНЛӘҮ** *к. диал.* Ҡылансыҡланыу, ҡыйпанлау.

**КӘЙЛЕ** [*ҡаҙ.*] *с.* Урыны-урыны менән, анда-һанда ғына үҫкән; ала-сула (иген, үҫемлектәргә ҡарата). *Иген кәйле булған.*

**КӘЙЛЕГЕҮ** (кәйлек*ә*) *к. ҡар.* **кәйелеү.**

**КӘЙЛӘ** [*рус.* кайло ⟨ *нем.*] *и.* Ике башы ла үткер сүкеш рәүешендәге ағас һаплы ҡорал. *Кәйлә менән ҡаҙыу. Кәйлә менән таш ватыу.*

**КӘЙМЕЛДӘҮ** *к. диал.* Һиңкелдәү.

**КӘЙПЕЛЕҮ** *к. һөйл. ҡар.* **кәйелеү** 1. *Кәйпелеп — кәйпелеп оса күгәрсендәр.* А. Игебаев.

**КӘЙПЕЛТЕҮ** *к. ҡар.* **кәйелтеү** 2. *Ташты кәйпелтеп ебәреү.*

**КӘЙТӘН** *и.* **1.** Уҡалы таҫма. *Уның [Һомайҙың] усма шәлкемдәй, енсектәрен ҡапларҙай, кәйтән менән биҙәүле сәс толомо һалынған.* «Урал батыр».

**2.** Үрмәле тар таҫма; ейәк. *Ҡара ғына бәрхәт күлдәгемә кәйтән тектем ҡыҙыл ебәктән* (Халыҡ йырынан).

**КӘЙФИӘТ** [*ғәр.*] *и. иҫк. кит.* **1.** Нәмәнең тышҡы ҡиәфәте, рәүеше.

**2.** Эштең рәүеше, хәле.

**КӘКЕРСӘК** *и.* **1.** Киртләс-киртләс һыҙыҡ. *Тау мороно һайын юл кәкерсәк яһап китә.* Ж. Кейекбаев. / Киртләс-киртләс биҙәк. *Ваҡ кәкерсәк.*

**2.** Үрәсә һалыу өсөн арба күкрәгенә ҡуйылған ике кәкре ағас. *Алғы кәкерсәк. Артҡы кәкерсәк.*

**3.** *иҫк.* Һабанға атты мисәү өсөн ҡуйылған кәкре ағас.

**КӘКЕРСӘКЛЕ** *с.* Кәкерсәк (1 мәғ.) рәүешендәге. *Кәкерсәкле һыҙыҡ. Кәкерсәкле биҙәк.*

**КӘКЕРСӘКЛӘҮ** *к.* Киртләс-киртләс итеү, кәкерсәкле итеү.

**КӘКЕРСӘЛӘҮ** *к. диал.* Кәкерсәкләү.

**КӘКЕС** *с.* **1.** Кәкрәйеп өҫкә ҡараған; кәксәйгән. *Кәкес бармаҡ.* ■ *Мырҙаш .. шаҙра табаҡ битле, кәкес танаулы, шағыр күҙле кеше.* Д. Юлтый.

**2.** *диал. ҡар.* **бәкес** [1] 1. *Кәкес салғы.*

**КӘК-КҮК** *оҡш.* Кәкүк ҡысҡырған тауышты белдергән һүҙ. *[Кәкүк] һаҡаулана, йәмле май айы уҙһа. Кәк-күк тип әйтер урынға, кәккәк тигән була.* С. Кулибай.

**КӘКРЕ** [1] *с.* Бер яҡҡа бөгөлгән, тура булмаған, төҙ түгел. *Кәкре ағас. Кәкре аяҡ. Кәкре таяҡ.// Кәкре һыҙыу.* ■ *Һыу ситендә ялбыр кәкре ҡайын, һыу эсәме әйелеп көн буйы.* Ф. Бикбов. **Кәкре һыҙыҡ** *мат.* тура булмаған, бөгөлгән, кәкрәйгән һыҙыҡ.

♦ **Бармағы үҙенә [табан] кәкре** *ҡар.* **бармаҡ. Дөйә муйынынан кәкре** бик килешмәгән эшкә ҡарата әйтелә. **Кәкрегә бөкрө** эш уңайға бармай, гел кире килгәндә әйтелә. **Кәкре тимер** *диал.* тәртешкә.

● *Кәкрене бөкрө күрә алмай.* Мәҡәл.

**КӘКРЕ** [2] *и. диал. ҡар.* **бөккән** 1. *Еләк кәкреһе. Картуф кәкреһе.* **Ҡаҙан кәкреһе** *шул уҡ* **ҡаҙан ҡолағы** (*ҡар.* **ҡаҙан**).

**КӘКРЕ-БӨКРӨ** *с.* Тегеләй ҙә былай ҙа кәкре, төрлө яҡҡа кәкрәйгән. *Кәкре-бөкрө ағас. Кәкре-бөкрө тимер. Кәкре-бөкрө урам.* ■ *Өмөтбайҙың өйө кәкре-бөкрө ҡайын ағасынан, унан-бынан һупалап ҡына яһалған.* Ғ. Дәүләтшин.

**КӘКРЕСУҠЫШ** *и. диал.* Ҡурпысыҡ.

**КӘКРЕШКӘ** *с. һөйл.* Ябығып, кәкрәйеп бөткән. *Ҡурайсы Әхмәҙи ҙә ярлы. Шулай ҙа уның, кәкрешкә генә булһа ла, ат ҡынаһы бар.* Ж. Кейекбаев.

**КӘКРӘЙЕҢКЕРӘҮ** *к.* Саҡ-саҡ ҡына кәкрәйеү, бөгөлә төшөү. *Кәкрәйеңкерәп йөрөү. Ағас кәкрәйеңкерәп үҫкән.*

**КӘКРӘЙЕҮ** *к.* Кәкрегә әйләнеү, кәкре булыу. *Кәкрәйгән ағас.* ■ *[Хәлим ағайҙың] ғүмер буйы байҙарға йорт һалып, келәт бурап кәкрәйеп ҡатҡан бармаҡтары ҡәләм тоторға һарап ипһеҙ.* З. Биишева. / Билде бөгөү, алға эйелеү. *Кәкрәйеп йөрөү. Кәкрәйеп тороу.*

**КӘКРӘЙЕШЕҮ** *к. урт. ҡар.* **кәкрәйеү.** *Көн боҙолдо.. Көтөүгә ҡыуған малдар төш етер-етмәҫтән ҡалтыранышып, кәкрәйешеп кире әйләнеп ҡайталар.* Ф. Әсәнов.

**КӘКРӘЙТЕҮ** *к.* Кәкрегә әйләндереү, кәкре итеү. *Таяҡты кәкрәйтеү.*

**КӘКРӘНЛӘҮ** *к. мыҫҡ.* Көс-хәл менән ыңғыр-шыңғыр ҡуҙғалыу (хәлһеҙ кешегә ҡарата). *Кәкрәнләп эшләп йөрөү.*

**КӘКСӘЙЕҮ** *к.* **1.** Кәкрәйеп өҫкә ҡарау (ниҙеңдер осона, башына ҡарата). *Кәксәйгән итек.* ■ *Ҡатын уртаса буйлы, аҡһыл һары сәсле, танауы бер аҙ өҫкәрәк кәксәйеп тор[а].* Н. Асанбаев.

**2.** Билдән бөгөлөп шоҡорайыу. *Һыуыкка кәксәйгән, дүрткә бөгөлгән башмаҡтар .. Стәрлегә ҡарай юл тотто.* «Һәнәк», 1969, № 7.

**КӘКСӘЙТЕҮ** *к.* Кәкрәйтеп өҫкә ҡаратыу (ниmәнеңдер осон, башын). *Ҡоралай алғы аяҡтарын ике яҡҡа киреп, башын кәксәйтеп ҡатып тик тора.* С. Кулибай.

**КӘКСӘН-БӨКСӘН** *оҡш.* Билдән яҙыла алмай саҡ-саҡ ҡуҙғалғанды белдергән һүҙ. *Кәксән-бөксән килеп йөрөү.*

**КӘКСӘНЛӘҮ** *к.* **1.** Кәксән-бөксән килеү, алға иңкәйеү; кәкрәнләү. *Кәксәнләп йөрөү.*

**2.** Башты кәксәйтеп борғаланыу; кәкәнләү. *Кәксәңләп йылан йөҙөп килә.*

**КӘКҮК** *и.* Оҙон ҡанат-ҡойроҡло, күкһел һыртлы, сыбар бауырлы урман ҡошо (йомортҡаһын үҙе баҫмай, сит ояға һала). *Кәкүк тауышы.* ■ *Арыш быуынға һикергәндә кәкүк һаҡауланып, саҡыр [май башлай].* А. Таһиров.

♦ **Кәкүк айы** *ҡар.* **ай** [1] 3. **Кәкүк емеше** йөнтәҫ һабаҡлы, ваҡ ҡына буранка рәүешендәге алһыу йәки күк сәскәле баллы ҡыр үләне; күк һөтләгән. **Кәкүк ҡатаһы** (*йәки* **ситеге**) һары ирен сәскәле, оҙонсараҡ япраҡлы ҡыр үләне. **Кәкүк сәрмәһе** *диал. ҡар.* **кәкүк ҡатаһы. Кәкүк эйеү** *диал.* сәңгелдәк эйеү. **Кәкүк саҡырта сығыу** кәкүк саҡырған ваҡытта яланға уйынға сығыу. **Кәкүк төкөрөгө** *ҡар.* **төкөрөк.**

**КӘКҮКБАШ** *к. диал.* Кәкүк емеше (*ҡар.* **кәкүк**).

**КӘКҮРКӘ** *и.* Майға баҫҡан ҡамырҙан ишеп, бормалап яһалған күмәс.

**КӘКШӘЙЕҮ** *к. ҡар.* **кәксәйеү.**

**КӘКШӘНЛӘҮ** *к. ҡар.* **кәксәнләү.**

**КӘКӘЙ** *и. һөйл.* Балалар телендә «бысраҡ, насар» тигән мәғәнәлә әйтелә.

**КӘКӘНЛӘҮ** *ҡ.* Башты кәксәйтеп, борғалана-борғалана хәрәкәт итеү (йылан, ҡарышлауыҡ һымаҡтарға ҡарата). *Һөлөк кәкәнләп тора. Йылан кәкәнләп йөҙөп килә.*

**КӘКӘШ** *и. иҫк.* Өс литр һыйышлы тире һауыт.

**КӘЛ** [1] *и.* Баҫылып тығыҙланыуҙан йәки бәҫәреүҙән барлыҡҡа килгән киҫәк, ҡатлам. *Бесәнде кәле менән алыу.*

**КӘЛ** [2] [*ғәр.*]: **кәл итеү** *диал.* хәлдән тайҙырыу, арытыу.

**КӘЛАМ** [*ғәр.*] *и. иҫк. кит.* Һүҙ, телмәр. *Залимды телһеҙ, һине өҫтөн итер тогро кәлам.* М. Ғафури. **Сәләм һуңында** (*йәки* **бәғдендә) кәлам** сәләм һуңында һүҙ (хат яҙғанда ҡулланыла). *Сәләм бәғдендә кәлам, беҙҙең тараftан һеҙгә бер малай ебәрелә.* Ғ. Ғүмәр.

**КӘЛБ** [*ғәр.*] *и. иҫк. кит.* Эт.

**КӘЛБӘГӘЙ** *с. диал.* Сифаты еренә еткерелмәгән; насар. *Оҫта мин тип маҡтана, эшләгәндә кәлбәгәй.*

**КӘЛДӘК** *и. һөйл.* **1.** Уҡмашып ҡатҡан киҫәк. *Бутҡаның кәлдәгән яҙыу.*

**2.** *ҡар.* **кәл** [1].

**КӘЛДӘКЛЕ** *с. һөйл.* Төйөр-төйөр булып уҡмашҡан. *Кәлдәкле бутҡа. Эремсек кәлдәкле булып эрегән.*

**КӘЛДӘКЛӘНЕҮ** *ҡ. һөйл.* Кәлдәкле булып ҡатыу. *Әүмәлә кәлдәкләнеп бешкән.*

**КӘЛЕП: кәлеп булыу** *ҡар.* **кәлепләнеү** 1. **Кәлеп итеү** *ҡар.* **кәлепләү** 1.

**КӘЛЕПЛӘНЕҮ** *ҡ.* **1.** Бер нәмәнең рәүешенә йәтешләнеү; ҡалыплашыу. *[Шофёр] кәлепләнеп бөткән ҡулдары менән баранканы әйләндерә-әйләндерә .. үҙ күргәндәрен һөйләй.* Р. Солтангәрәев. / Йәтеш булып, тура килеп тороу, килешеү. *[Егеттең] кепкаһы кәлепләнеп кенә маңғайына ятып тора.* Д. Бүләков.

**2.** *күсм. һөйл.* Нимәгәләр йәтешләнеү; уңайлашыу. *Ул көндөҙ йоҡларға кәлепләнгән.*

**КӘЛЕПЛӘҮ** *ҡ. һөйл.* **1.** Берәй нәмәнең рәүешенә йәтешләү; ҡалыплаштырыу.

**2.** *күсм.* Рәткә, йайға килтереү.

**КӘЛЖИҒЫР** *и. диал.* Кеҫәртке.

**КӘЛИГӘ** *и. диал.* Аҡра шалҡан.

**КӘЛИМӘ** [*ғәр.*] *и.* Һүҙ. **Бер кәлимә һүҙ** бер ауыҙ һүҙ, бер һүҙ. *Бер кәлимә һүҙ әйтеү. Бер кәлимә йылы һүҙ.* ■ *[Дәрүиш:] Ил ағалары, сабыр итегеҙсе, Мосафирҙың да бер кәлимә һүҙен тыңлағыҙ.* М. Кәрим.

**КӘЛИСӘ** [*ғәр.*] *и. иҫк.* Ҙур сиркәү, собор.

**КӘЛЙЕМӘ** *и.* **1.** Ҡар аҫтында ҡышлаған серек картуф крахмалы.

**2.** Шунан бешерелгән ҡоймаҡ. *[Апайым] баҡса ҡаҙғанда сыҡҡан картуфтан кәлйемә бешерә.* Ғ. Ибраһимов.

**КӘЛЙӘ** [*рус.* кайло] *и. диал.* Бағау.

**КӘЛЙӘН-КӨЛЙӘН** *оҡш.* Ян-яҡҡа аушан-таушан килгән хәрәкәтте белдергән һүҙ. *[Амантаевтың] тубыҡ быуындары хәлһеҙләнгәндән-хәлһеҙләнә бара. Аяҡтарын кәлйән-көлйән килтереп атлай.* Ф. Иҫәнғолов.

**КӘЛЛЕ** *с.* Бәҫәреп ҡатлы-ҡатлы булып уҡмашҡан. *Кәлле бесән. Кәлле тиреҫ.*

**КӘЛЛӘНЕҮ** *ҡ.* Баҫылып тығыҙланыуҙан ҡатлы-ҡатлы булып уҡмашыу. *Бесән кәлләнгән. Оҙаҡ ятҡан тиреҫ кәлләнә.*

**КӘЛП** *оҡш.* Ҡапыл ҡолап төшкәнде, яҙа баҫҡанды белдергән һүҙ. *Кәлп итеп ҡалыу.*

**КӘЛПӘК** *и. һөйл.* Ниҙең дә булһа түңәрәк ялпаҡ башы. *Сөйҙөң кәлпәге йәнселгән. Кәлпәк башлы сөй. Бәшмәк кәлпәге.*

**КӘЛСЕР** *и.* Бер башҡорт ырыуының исеме.

**КӘЛСӘ** *и. диал.* Ҡылған. *Кәлсәгә салғының үткере кәрәк.*

**КӘЛСӘКЛӘНЕҮ** *ҡ. һөйл.* Ныҡ кибеүҙән ыуалып тороу (үлән, бесәнгә ҡарата).

**КӘЛТЕМ** *и. диал.* Ҡылтым.

**КӘЛТЕРЕС** *и. диал.* Бәләкәй тимер күнәк.

**КӘЛТЕР-КӨЛТӨР** *оҡш.* **1.** Тимер, ҡалай һымаҡ нәмәләр һелкенгәндә келтерләп сыҡҡан тауышты белдергән һүҙ. *Кәлтер-көлтөр итеү.* ■ *Эшелондар кәлтер-көлтөр килеп, көнбайышҡа табан ашыға.* Ғ. Шәрипов.

**2.** *күсм.* Көс-хәл менән саҡ ҡыбырлағанды белдергән һүҙ (оло йәштәге, хәлһеҙ кешеләргә ҡарата). *Кәлтер-көлтөр генә йөрөү.*

**КӘЛТ-КӨЛТ** *оҡш.* Быуынһыҙ һымаҡ тәнтерәкләп атлағанды белдергән һүҙ. *Кәлт-көлт килеп атлау. Кәлт-көлт баҫыу.*

**КӘЛТӘ** [1] *и. диал.* Һикәлтә.

**КӘЛТӘ** [2] [*фарс.*]: **кәлтә йыланы** *диал.* кеҫәртке.

**КӘЛТӘЙЕҮ** [1] *ҡ. диал.* Кәксәйеү.

**КӘЛТӘЙЕҮ** [2] *ҡ. диал.* Ҡылтайыу.

**КӘЛТӘН-КӨЛТӘН** *оҡш. ҡар.* **кәлт-көлт.**

**КӘЛТӘНЛӘҮ** *ҡ. диал.* Ян-яҡҡа аушаңлап сайҡалыу. *Паровоз ҡапыл боролғанлыҡтан вагондар тағы ла нығыраҡ кәлтәңләйҙәр һәм ул аунарҙан, был аунарҙан ғына ҡалалар.* Ж. Кейекбаев.

**КӘЛӘБӘ** *и. диал.* Дебеткә ҡатланған еп; ҡатлыҡ.

**КӘЛӘНКҮР** [*рус.* коленкор ⟨ *фр.*] *и. һөйл.* Коленкор. *Кәләнкүр яулыҡ.* ■ *Ауыҙы ҡанға буялған, йөҙө аҡ кәләнкүргә әйләнгән Йыһанды күргәс Сәхибә ҡатып ҡалды.* Ғ. Хәйри.

**КӘЛӘП** *и.* **1.** (*йәки* **кәләп ағасы)** Иләнгән епте аяҡлай торған ике башы саталы, ҡолас ярым самаһындағы оҙон ағас. *Аҡ ебәккәй һалдым кәләпкә, бер бөртөккәйенә ҡалғансы* (Халыҡ йырынан). **Кәләп һалыу (***йәки* **һарыу)** 1) епте кәләпкә урау; 2) *күсм.* бер арала тегеләй-былай туҡтауһыҙ йөрөп тороу. *Килмәттең ҡәйнеше [иптәше менән] .. кисә, ярты төн ауғансы гармун тызылдатып, урам буйлап кәләп һалдылар.* Ф. Иҫәнғолов.

**2.** Шул ағасҡа аяҡланған еп. *Йөн кәләбе. Бер кәләп еп.* ■ *[Имам] оҙон йыуан сыбырткыһын кәләп кеүек итеп урап муйынына аҫҡан.* Р. Ғабдрахманов.

◆ **Кәләп буйы юл (***йәки* **ер)** үтелгән юлдың бик аҙ, ҡыҫҡа булғанлығын белдерә. *Аҡмырҙа әй бара, ти, әй бара ти, артына әйләнеп ҡараһа, кәләп буйы ер барған, ти* (Әкиәттән).

**КӘЛӘПЛЕ** *с.* Кәләпкә һалынған; аяҡлы. *Кәләпле еп. Кәләпле йөн.*

**КӘЛӘПЛӘНЕҮ** *ҡ. төш. ҡар.* **кәләпләү.** *Кәләпләнгән еп.*

**КӘЛӘПЛӘҮ** *к.* Кәләпкә һалыу; аяҡлау. *Епте кәләпләү. Йөндө кәләпләү.*

**КӘЛӘПҮШ** [*фарс.*] *и.* Ҡатын-ҡыҙҙың бейек түбәле, арҡаны тотош ябып торған, сулпылар менән биҙәлгән киң арҡалығы булған, таңҡамәрйенгә бөткән боронғо баш кейеме. *Кәләпүш түбәһе. Кәләпүш ҡойрого.*

**КӘЛӘШ** *и.* **1.** Әйттерелгән ҡыҙ (кейәүенә ҡарата). *Кәләште оҙатып алыу.* ■ *[Ғәлимйәндең] кәләшкә бараһы бар. Әле лә инде, эш ваҡыты тип, үс аҙна бара алмай ҡалды.* И. Насыри. **Кәләш алыу** өйләнеү. **Кәләш кейәүләү** *ҡар.* **кейәүләү. Кәләш әйттереү** һөйләшеп, кәләш килешеү. *Ҡарт үс улына ла кәләш әйттереп, ҙур-ҙур йорттар һалдырҙы, ти* (Әкиәттән).

**2.** Ҡатын (тәүге өйләнешкән йылдарҙа). *Йыл да уҙманы, кәләше уға [Буранша͏ға] бал ҡорто кеүек теремек .. ҡыҙ табып бирҙе.* З. Биишева.

● *Көйһөҙ кейәү кейәүләп ятҡансы, көйлө кейәү кәләшен алып ҡайтҡан.* Мәҡәл.

**КӘЛӘШЛЕККӘ** *р.* Кәләш, ҡатын итеп (алыу, һоратыу һ. б.), кәләш, ҡатын булып (килеү). *Әхмәтшаһы уны [Сәрбиямалды] кәләшлеккә алырға һорап бер тапҡыр ҙа яусы ебәрмәне.* З. Биишева. *Түбәм күккә тейер ине, һин килһәң кәләшлеккә* (Халыҡ йырынан).

**КӘМ** [*фарс.*] *р.* **1.** Тейешле күләмдән, һандан әҙ; *киреһе* артыҡ. *Кәм биреү. Көткәндән кәм сығыу.* / Билдәле бер кимәлдән әҙ. *Күрән аттың даны таралды. Ғаяз байҙың түбәһе күккә күтәрелде ..Мин дә аты уҙған Ғаяз байҙан кәм шатланманым.* Д. Юлтый. *Ҡәмәр әбейҙең ҡыуанысы башынан ашҡан. Ул түрҙә .. ултыра. Дәрәжәһе оҫтабикәнән бер иле лә кәм түгел.* Ғ. Дәүләтшин.

**2.** Булмышы, сифаты яғынан насар; түбән. *Кәм күреү.* // *Кәм кеше. Үҙеңде кәмгә һанау.* ■ *Зыя Тайморзин ысын артистарҙан кәм түгел. Ул йырға, ул бейеүгә — уны ғына ҡуш.* М. Тажи.

♦ **Кәмен ҡуймау** *һөйл.* эш-ҡылыҡта кемдәндер ҡалышмау. **Кәм тигәндә** иң әҙе; әҙ тигәндә, кәмендә. **Кәм һөйләм** *грам.* ҡайһы киҫәге төшөп ҡалғаны аңлашылып торған ябай һөйләм.

**КӘМА-ЙӘНБӘҒИ** [*ғәр.*] *р. иҫк. кит.* Нисек кәрәк — шулай; тейешенсә.

**КӘМАЛ** [*ғәр.*] *с. иҫк. кит.* Камил.

**КӘМАЛӘТ** [*ғәр.*] *и. иҫк. кит.* Камиллыҡ. *Кәмаләтең бөйөк һинең Өммөкамал.* Ш. Бабич.

**КӘМА-ҺҮӘ** [*ғәр.*] *р. иҫк.* Нисек булһа — шулай; булғанынса. *Бөтә хәлде кәма-һүә һөйләп бирҙем.*

**КӘМЕНДӘ** *инш.* Әҙ тигәндә, кәм тигәндә. *Һәр ауыл һайын кәмендә үс указный мулла бар.* Ш. Бабич.

**КӘМЕТЕЛЕҮ** *к. төш. ҡар.* **кәметеү.**

**КӘМЕТЕҢКЕРӘҮ** *к.* Күләмен, һанын кәметә биреү, аҙайта төшөү. *Хаҡын кәметеңкерәп һатыу.*

**КӘМЕТЕҮ** *к.* Күләмен, һанын әҙәйтеү; *киреһе* арттырыу. *Тиҙлекте кәметеү. Планды кәметеү. Сығым күләмен кәметеү.* ■ *[Үмәр ҡарт] мәһәрҙе һаман кәметмәй, етмәһә, түйына тыу бейә һуйыр-һың, тип әйтә, ти .* Һ. Дәүләтшина.

**КӘМЕТЕҮСЕ** *и. мат.* Икенсе бер һандан алынып, шуны кәметкән һан.

**КӘМЕҮ** *к.* Күләме, һаны әҙәйеү; *киреһе* артыу. *Көс кәмей. Һыу кәмей.* ■ *Өйҙә беҙҙең ғаиләнән бер кеше кәмегәс, әллә нисек яманһыу булып китте.* К. Кинйәбулатова.

● *Иҙел һыуы эскәндән кәмемәй.* Мәҡәл.

**КӘМЕҮСЕ** *и. мат.* Ниндәйҙер һан алынып, кәмегән һан.

**КӘМИТ** [*рус.* комедия ⟨ *гр.*] *и. һөйл.* **1.** Көлкөгә ҡоролған тамаша. *Кәмит күрһәтеү.* ■ *[Иркә — Өммиәгә:] Концертта сығыш яһау ниндәй кәмит булһын! Кәмит тип һеҙҙең заманда айыу бейетеп йөрөгәнде генә әйткәндәр бит ул.* Ғ. Әхмәтшин.

**2.** Ҡыҙыҡ нәмә; мәрәкә. *Кәмит ҡороу.* ■ *Исмәғил йыш ҡына бер кәмит уйлап сығара. Арыған-алйыған саҡта шул ғына кәрәк инде.* Я. Вәлиев.

**3.** *с. мәғ.* Уйын-көлкөгә әүәҫ, кеше көлдөрөргә яратҡан, шаян. *Кәмит кеше.* ■ *Кәмит малай ул [Хәлкәй], йырлаһынмы, бейеһенме, көлдөрһөнмө — барыһын да эшләй белә.* Д. Юлтый.

**КӘМИТСЕ** *и. һөйл.* **1.** Көлкөлө роль башҡарған артист. *Йәрминкәгә килгән кәмитселәрҙең буялған биттәренә, алйот булып аҡырыуына шаҡ ҡатып тора [быҙ].* А. Таһиров.

**2.** *күсм.* Кеше көлдөрөүсе.

**КӘМЛӘҮ** *к.* Түбән, кәм күрһәтеп насарлау; хурлау. *Кешене кәмләү.* ■ *Кәмләмәгеҙ ирҙе, хурламағыҙ, һау-сәләмәт булһа, мал таба* (Халыҡ йырынан).

**КӘМЛӘШЕҮ** *к. урт. ҡар.* **кәмләү.**

**КӘМПЕР** [*фарс.*] *и. диал.* Йәше оло ҡатын; әбей.

**КӘМСЕЛЕК** *и.* **1.** Тейешенсә булмаған күренеш, етешһеҙ яҡ; етешһеҙлек. *Үҙ кәмселегеңде күрә белеү. Кәмселектәрҙе бөтөрөү.* ■ *Әҙәби белем биреү балаңы образдар ярҙамында уйларға өйрәтеү менән бергә алып барылмай. Был ҙур кәмселек.* К. Әхмәтйәнов.

**2.** Түбәнһетеп ҡараған, кәмһеткән мөнәсәбәт. *Курмәһәм дә тарлыҡ, хурлыҡ, кәмселек, ҡурҡыныс уйҙар эсендә уйланам.* Ш. Бабич.

**КӘМ-ХУР: кәм-хур булыу** башҡаларға ҡарағанда насарыраҡ хәлдә булыу, кәмселек кисереү. *[Зиннәт:] Донъя бер бында ғына тимәгән. Баш һау булһа, кәм-хур булмабыҙ.* Х. Ибраһимов. **Кәм-хур итеү** кеше алдында түбәнлеккә төшөрөү, кәмһетеү. *[Мәҙинә — Нуруллаға:] Бер үк минең улымды кәм-хур итә күрмә инде, күҙ-колаҡ бул.* А. Мөбәрәков. *Исемемдән уңдым, кеше алдында кәм-хур итмәне.* М. Кәрим.

**КӘМҺЕНЕҮ** *к.* Үҙеңде кәм күреү, кәмгә һанау; түбәнһенеү. *Балалар аталарының .. тотолоуына хурлана, кәмһенә ине.* К. Туйкин.

**КӘМҺЕТЕЛЕҮ** *к. төш. ҡар.* **кәмһетеү.** *Кәмһетелгән кеше.* ■ *Һай был ҡоллоҡ, кәмһетелеү үтә икән йөрәк, бауырға.* Ҡ. Даян.

**КӘМҺЕТЕҮ** *к.* Кәмгә ҡуйып ҡыйырһытыу; түбәнһетеү. *Кәмһетмәгеҙ ирҙе, хурламағыҙ, бәлә йөрөй әҙәм башынан* (Халыҡ йырынан).

● *Өргән эт тешләмәҫ, әрләгән дуҫ кәмһетмәҫ.* Мәҡәл.

**КӘМШЕК** *с. диал.* Йәмшек.

**КӘМШӘЙЕҮ** *к. диал.* Йәмшәйеү.

**КӘМӘ** *и.* Һыу өҫтөндә йөҙөп йөрөү йәки һыу аша сығыу өсөн эсе соҡор итеп эшләнгән ҡора-

мал. *Елкәнле кәмә. Ишкәкле кәмә. Моторлы кәмә. Такта кәмә. Резина кәмә. Кәмә ҡойрого. Кәмә мороно. Борам кәмәhе.* ■ *Кеше талға бәйләп ҡуйған ҡайыҡ кәмәhен сисеп, ишкәк хеҙмәтен үтәгән ярыҡ ағас көрәген алды ла .. икенсе ярға йүнәлде.* Ҡ. Даян. **Һыу аҫты кәмәhе** hыу аҫтынан йөрөй торған карап.

♦ **Ике кәмә ҡойроғон тотоу** файҙа эҙләп, бер үк ваҡытта ике нәмә артынан ҡыуыу. **Кәмә ҡомға терәлеү** ауыр хәлдә ҡалыу, эш насарланыу. *[Гәрәй — Сакайға:] Ә-ә, хәҙер Гәрәй дуҫ кәрәк булдымы ни? Кәмәң комга терәлә торғандыр шул.* Б. Бикбай. **Кәмәгә hыу кереү** ҡыйын, хәүефле хәлгә ҡалыу. **Тишек** (*йәки* **ярыҡ**) **кәмәгә ултыртыу** hемәйтеү.

**КӘМӘЙ** *и. кар.* **эхирәт** [2].

**КӘМӘРСЕК** *и. диал.* Аҡ сәпсек (*кар.* **сәпсек**).

**КӘМӘСЕ** *и.* Кәмә менән hыу аша сығарыусы кеше. *Кәмәсе карт аяҡтарын кәмә төбөнә ҡаҙаклаған арҡыры таяуға терәп, артҡа тайшана биреп ишә.* Ғ. Ғүмәр.

**КӘМӘСЫҒЫШ** *и.* Кәмә менән кешеләрҙе hыу аша сығара торған урын.

**КӘМӘШӘҮ** *и. диал.* Ҙур ялғаш, улаҡ. *Кәмәшәүҙән малға hыу эсереү.*

♦ **Эсе кәмәшәү кеүек** эсе бик ҙур (hыйыр малына ҡарата әйтелә).

**КӘНАР** [*фарс.*] *и. иҫк. кит.* 1. Ниҙеңдер сите, сиге.

2. Яр.

**КӘНДЕ** [1] *а. иҫк. кит.* Үҙ, үҙе. *Беҙ кәндебеҙ.* ■ *Уйлаған ул, алланы еңмәмме, тип, ерҙә кәндем аллалыҡ ҡылмаммы, тип.* Ш. Бабич.

**КӘНДЕ** [2] *к. кар.* **кәнт.**

**КӘНДЕЙ** [*фарс.*] *и. иҫк.* Ҡабыҡты тотош көйө ҡуптарып алып яhаған hауыт. *Ҡарасәс Сәғит менән Дусмөхәмәткә берәй кәндей ҡатыҡ сығарып бирҙе.* А. Таhиров.

**КӘНДЕРЛӘҮ** *к. hөйл.* Аяҡ, тубыҡ быуынын тота алмай ҡалтырау. *Ҡонан айғыр кәндерләй--кәндерләй арттан эйәрҙе.* «Совет Башҡортостаны», 1965, 27 февраль.

**КӘНДИЛ** *и. кар.* **ҡәндил.**

**КӘНИЗӘК** [*фарс.*] *и.* 1. Йәш тол ҡатын. *Һин илама, әсәй айырылғас, хур булыр тип мине донъяла. ..Мин кәнизәк түгел донъяға.* Ғ. Амантай.

2. Хәрәм hарайындағы йәш ҡатын-ҡыҙ; hөйәркә. *[Хәйбрахман бай:] Мөхәммәт пәйғәмбәрҙең туғыҙ ҡатыны, йөҙәрләгән кәнизәге булған, ти.* Д. Юлтый.

**КӘНСЕК** *с. диал.* Кәнтәй. *Кәнсек бүре.*

**КӘНСИР** [*рус.* консервы] *и. hөйл.* Бәләкәй генә йоҡа ҡалай hауыт (ғәҙәттә консерванан бушаған була).

**КӘНСӘ** *и. hөйл.* Кәнсәләр.

**КӘНСӘЛӘР** [*рус.* канцелярия ⟨ *лат.*] *и. hөйл.* Учреждениеның яҙыу-hыҙыуға бәйле эштәрен алып барған бүлеге hәм шул бүлек урынлашҡан бүлмә; канцелярия. *Колхоз кәнсәләре. Сельпо кәнсәләре. Кәнсәләр эше.* ■ *[Ғимади улына:] Кәнсәләргә барып ҡайт булмаhа, колхоздың эштәрен hораштыр.* С. Ҡудаш.

**КӘНТ** *р.* Нәҡ, тап. *Кәнт үҙә. Кәнт өҫтөнә баҫҡан.* ■ *Өсөнсө көн листовка йәбештерелгән урында кәнт шундай уҡ яңы листовка .. тора ине.* Х. Мохтар.

**КӘНТӘЙ** *и.* 1. Эт hымаҡ йәнлектәрҙең инәhе. *Кәнтәй бүре. Кәнтәй эт.*

2. *hөйл.* Ҡатын-ҡыҙҙы эрләгәндә әйтелә.

**КӘНТӘЙЛЕК** *и. hөйл.* Ҡатын-ҡыҙҙың ирҙәргә оҡшарға тырышып ҡыланыуы.

**КӘНТӘЙЛӘНЕҮ** *к. hөйл.* Ир-ат тирәhендә hырғаланыу, ураланыу.

**КӘНФИТ** [*рус.* конфета ⟨ *ит.*] *и.* Емеш hуты менән шәкәр йәки шоколадты ҡайнатып, ваҡ-ваҡ ҡына итеп төрлө формаларҙа эшләгән татлы аҙыҡ. *Баллы кәнфит. Борсаҡ кәнфит. Шоколадлы кәнфит. Ҡағыҙлы кәнфит.* ■ *[Атайым] беҙҙең барыбыҙға ла көскәле кәнфит алып ҡайтып бирә торғайны.* Т. Йәнәби.

**КӘНФИТЛӘНЕҮ** *к. hөйл.* Сөсө телләнеү (ғәҙәттә, ҡыланған, ярамhаҡланып татлы hүҙҙәр hөйләгән кешегә ҡарата әйтелә).

**КӘНӘП** *и. бот.* Йылы яҡ киндере.

**КӘНӘРИ** [*рус.* канарейка] *и.* Алакас турғайҙар ғаиләhенә ҡараған асыҡ hары төҫтәге hайраусы ҡош.

**КӘНӘФИ** [*рус.* канапе ⟨ *фр.*] *и.* 1. Бер башлы артhыҙ диван. *Юламанов стена буйындағы кәнәфигә барып ултырҙы.* Н. Мусин.

2. *hөйл.* Кресло. *[Хәҙрәт менән Гариф бай] ҡара-ҡаршы ҡуйылған йомшаҡ кәнәфиҙәргә ултырып әңгәмә башланы.* Ғ. Хәйри.

**КӘҢГЕЛДӘК** *и. диал.* Ҡалҡанбаш.

**КӘҢГЕЛДӘҮ** *к.* 1. Улай-былай аушаңлау. *Кәңгелдәп атлау.* ■ *Фәйзулла кәңгелдәп торған өҫтәленә терhәкләнеп, яңағына таянып, йәнә уйға ҡалды.* Ф. Иҫәнғолов.

2. *диал.* Ҡалҡанбаш уйнау.

**КӘҢГЕР** *с.* Кәүҙәгә йоҡа, кәрhеҙ; кәгеҙ. *Кәңгер оҙон буйлы Алеша .. баҙыҡ Байрас янында үтә йәш күренеп ҡуя.* З. Биишева.

**КӘҢГЕР-КӨҢГӨР** *оҡш.* Быуынhыҙ, хәлhеҙ кешенең, малдың хәрәкәтен белдергән hүҙ. *Кәңгер-көңгөр килеү.* ■ *Ишбикә инәй .. кәңгер-көңгөр баҫып өйҙән сығып та китте.* З. Биишева.

**КӘҢГЕРЛӘҮ** *к.* Хәлhеҙлектән ҡалтырау, кәңгер-көңгөр килеү. *Кәңгерләп кенә йөрөү.* ■ *Кәңгерләп торҙо ул [өйөр айғыры] бер аҙ.., ҡулбаштарын hелкетеп.. [Бүрене] нисек еңә алғанына торғандыр иҫе китеп.* М. Илбаев.

**КӘҢКӘЙЕҮ** *к. диал.* Төңкәйеү.

**КӘҢӘШ** *и.* 1. Нисек итергә өйрәтеп әйткән hүҙ. *Кәңәш биреү. Кәңәш итеү. Кәңәш hорау. Кешенең кәңәшен тотоу.* ■ *[Ыҫмаҡай — Алдарға:] Һин, уҙаман сабыр аҡыллы кеше. Кәңәшеңде бирhәң икән: нишләргә беҙгә? Был яфаларҙан нисек ҡотолорға?* Ғ. Хөсәйенов.

2. Нисек итергә үҙ-ара фекер алышыу рәүешендәге әңгәмә. *Кәңәш ҡороу. Кәңәш итешеү. Кәңәшкә йыйылыу.* ■ *Суд кәңәшкә киткәндә, көн кискә ауышып бара ине.* Ғ. Әмири.

● *Ике кәңәш бер булhа, илле егет йөҙ була.* Мәкәл.

**КӘҢӘШЕҮ** *к.* Кәңәш итешеү; кәңәшләшеү. *Кәңәшеп эшләү.* ■ *[Юлтыев Кусимовҡа:] Бөгөн идара ағзаларын йыйып hөйләш, кәңәш.* Ғ. Әмири.

● *Кәңәшкән үкенмәҫ.* Әйтем.

**КӘҢӘШЛЕ** *с.* Кәңәшләшеп эшләгән. *Кәңәшле эш.* ■ *[Мәсем — Мактымһылыуга:] Әйт һүҙең, тартынма, уртага һалып уйлайык, кәңәшле йыйын таркалмас, әселәшмәй уйлайык.* «Кара юрга».

**КӘҢӘШЛӘҮ** *к. диал.* Кәңәш итеү.

**КӘҢӘШЛӘШЕҮ** *к.* Берәйһе менән кәңәшеү, һөйләшеү. *Карттар менән кәңәшләшеү. Үҙ-ара кәңәшләшеү.* ■ *Кайтырга, иләү менән кәңәшләшергә кәрәк, ни әйтерҙәр.* Ғ. Хөсәйенов.

**КӘҢӘШМӘ** *и.* Һөйләшәү, кәңәшләшеү өсөн саҡырылған йыйылыш. *Колхозсылар кәңәшмәһе. Укытыусылар кәңәшмәһе.* ■ *Кәңәшмә дуслык һәм иптәштәрсә хеҙмәттәшлек шарттарында үтте.* «Совет Башҡортостаны», 1986, 12 июнь.

**КӘҢӘШСЕ** *и.* **1.** Кәңәш биреүсе. *Кәңәшсе лә, дус та, иптәш тә һин, о партиям, һин бит бер генәм.* Я. Ҡолмой.

**2.** Эште аңлатыуға, юл-сараһын күрһәтеүгә бәйле вазифа һәм шул вазифаны үтәгән кеше; советник. *Хәрби кәңәшсе. Илселек кәңәшсеһе.* ■ *Батшаның өлкән кәңәшсеһе батшага: — Был ике әҙәм балаһы беҙҙе имен йәшәтмәс.. Ҡотолайыҡ уҙҙәренән! — тип әйтте, ти* (Әкиәттән).

**КӘҢӘШСЕЛ** *с.* Кәңәш, ярҙам биреүгә ихлас. *Кәңәшсел кеше.*

**КӘҢӘШ-ТӨЙӨШ** *и. диал.* Кәңәш-төңәш.

**КӘҢӘШ-ТӨҢӘШ** *и. йыйн. кар.* **кәңәш** 2. *Усман энеләрен ашка саҡырҙы. Саҡырыуҙың төп маҡсаты Әхмәҙи менән ҡоҙа булышыу хаҡында кәңәш-төңәш итеү ине.* Ж. Кейекбаев.

**КӘП** *р.* Йәтеш, килешлė, таман. *Кәп булыу. Кәп килеү.* ■ *Башта Муллагәли бабай һыҙымдарын һыҙҙы. Уйы буйынса шкаф колхоздың үҙәк клубындагы фабричныйҙан да кәберәк булырга тейеш.* Р. Солтангәрәйев.

**КӘПЕРӘЙЕҮ** *к. һөйл.* Кәпрәйеү.

**КӘПКӘКЛӘҮ** *к. диал.* Үсекләү.

**КӘП-КӘКРЕ** *с.* Ныҡ кәкре, бөтөнләй кәкре.

**КӘПЛӘНЕҮ** *к.* Таман, йәтеш булыу, тап килеп тороу. *Кәпләнеп кенә торган капкас.* ■ *[Хаят] өҫтөнә кәпләнеп кенә торган аҡ батист күлдәк кейгән, ҡулында алтын йөҙөк.* Һ. Дәүләтшина.

**КӘПЛӘҮ** *к.* **1.** Таман, тығыҙ итеп ҡаплау.

**2.** *кар.* **йөпләү.**

**КӘПЛӘШЕҮ** *к. кар.* **кәпләнеү.** *[Сираевтың] гимнастеркаһы киң текә яурындарына кәпләшеп тора.* Н. Мусин.

**КӘПРӘЙЕҮ** *к.* Маҡтанып, эреләнеп, танау күтәреү; кәпәренеү. *Кайһы бер ҡыҙҙар кәпрәйергә ярата, үҙен әллә кемгә ҡуйып, танау күтәреп, .. кеше танымаган була.* Ә. Бикчәнтәев.

**КӘПРӘН** *и.* Мендәр-яҫтыҡтың йөн-мамыҡ тултырылған эске тышы. *[Гөлбөҫтан:] Мендәр тыштары ла туҙып, карайып, йыртылып бөттө. Йыуайым тиһәң—кәпрәне юк.* Ғ Дәүләтшин.

**КӘПСӘЛЕҮ** *к. диал.* **1.** Кипсәлеү.

**2.** *кар.* **капланыу** 3.

**КӘПТӘ** *и. иҫк.* **1.** Калушлы йоҡа быйма.

**2.** *диал.* Быйма.

**КӘПШӘЙЕҮ** *к. диал.* Йәмшәйеү.

**КӘПӘЙЕҮ** *к.* **1.** Тупайып алға сығыу, ҡабарып тороу (ҡорһаҡҡа, күкрәккә ҡарата). *Эс кәпәйгәнсә һыу эсеү. Кәпәйеп торган күкрәк.*

**2.** *кусм. һөйл.* Һауаланып түш киреү; кәпрәйеү. *Кәпәйеп баҫып тороу.*

**КӘПӘЙТЕҮ** *к.* Киреп, алға сығарыу (эсте, күкрәкте). *Эсте кәпәйтеү.*

**КӘПӘК** *и. диал.* Меҫкен бүрек.

**КӘПӘЛЙЕМДӘ** *р. диал.* Көтмәҫтән, ҡапыл.

**КӘПӘРЕНДЕРЕҮ** *к. йөкм. кар.* **кәпәренеү.** *Машкин уны [Ғәбделкәйҙе] юрамал кәпәрендерә, гел боҙоҡлоҡҡа өйрәтә.* Я. Хамматов.

**КӘПӘРЕНЕҮ** *к.* Нигеҙһеҙ маһайып, эреләнеү, маҡтаныу; кәпрәйеү. *Кайҙа ул Наиләнең биҙәнеп-яһанып, кеше алдында кәпәренеп йөрөгән саҡтары.* Ғ. Ибраһимов.

**КӘПӘРЕҮ** *к. һөйл.* Кәпәренеү. *Маҡтаһалар ул [Талха] кәпәрмәй, морон сөйөп йөрөмәй.* С. Кулибай.

**КӘПӘС** *и.* **1.** *һөйл.* Ирҙәрҙең йылы баш кейеме; бүрек. *Куян кәпәс. Кырма кәпәс. Кырпыулы кәпәс.* ■ *Каяла күп карагай, баштан кәпәс осоп төшә карагайга караһаң.* С. Кулибай.

**2.** *диал.* Түбәтәй.

◆ **Кәпәс һалыу** түбәнселек белдереү. *Кәпәс һалып һөйләшеү.* ■ *Кәпәс һалып сәләм бирә миңе тәү кат күргән малайҙар.* М. Кәримов. **Кәпәс һуғыу** әйткәнсә эшләйем, тип ант итеү.

**КӘПӘСБАШ** *и. диал.* Гөрөздә.

**КӘР** [1] *и.* Физик һәләт; көс, ҡарыу. *Кәр бөтөү. Кәр кайтыу. Кәрҙән тайыу. Кәр китеү.* ■ *[Акйегет:] Күкрәгемдә кәрем бар, яндарымда йәрем бар. Береһе сыкһа, береһе калыр, эсемдә ике йәнем бар.* М. Кәрим. *Ишеккәйем алды алмагас, мена алмайым кәрем булмагас* (Халыҡ йырынан). / *кусм.* Эш башҡарыр мөмкинлек; сара. *Мал йыйырга, уланым, хәлем юк, хан малдарын бирергә кәрем юк.* «Алпамыша».

**КӘР** [2] [*фарс.*] *и. иҫк.* Эш, шөғөл.

◆ **Кәр итеү** тәьҫир итеү. **Кәр ҡылыу** зыян килтереү, насар эш ҡылыу. *Кара эсле Шулгән дә Уралга кәр кылмаган, алышһа ла түҙә алмай, шунда ергә колаган.* «Урал батыр».

**КӘРАҺӘ** [*гәр.*] *и. иҫк. кит.* Ерәнеү тойғоһо.

**КӘРГӘЗИН** *и. диал.* Кармазин.

**КӘРЕ** *и. диал.* Тау бите.

**КӘРЕҪ** *с. диал.* Тиҫкәре, ҡырыҫ.

**КӘРЕШКӘ** *и.* Теҙмә япраҡлы, сырмалып торған мыйыҡлы, ваҡ ҡына ирен сәскәле ҡуҙаҡлы үлән. *Кыҙыл кәрешкә. Урман кәрешкәһе.* // *Кәрешкә бесән.* ■ *Ваҡ тал араһында урмә сәскә, гөлйемешкә урелә кәрешкә.* С. Кулибай.

◆ **Еҫле кәрешкә** оҙонсараҡ ҡуш япраҡлы, хуш еҫле эре сәскәле, нәҙек оҙон һабаҡлы ваҡ ҡуҙаҡлы баҡса үҫемлеге. **Ҡуян кәрешкәһе** ҡыҙыл йә аҡ төҫтәге суҡ сәскәле, яҫы, йомшаҡ япраҡлы татлы үлән. **Сыскан кәрешкәһе** нәҙек оҙон тарбаҡ һабаҡлы, ваҡ ҡына теҙмә япраҡлы, бөрөләп торған ваҡ күк сәскәле ҡара борсаҡлы кәрешкә һымаҡ үлән.

**КӘРЖЕҮ** *к. диал.* Артау. *Кәржегән камыр. Кәржегән кымыҙ. Катыҡ кәржеп ултыра.*

**КӘРЗИН** [*рус.* корзина] *и.* Тал сыбығы, ҡамыш һ. б. үреп яһаған һауыт. *Кәрзин үреү. Кәрзингә еләк тиреү.*

**КӘРЗИНКӘ** [*рус.* корзинка] *и. һөйл.* **1.** *кар.* **кәрзин.**

**2.** Ҡағыҙ, суп-сар ташлай торған үрмә һауыт.

*Сафуан .. вак-төйәк кағыҙҙарҙы йомарлап кәрзинкәгә ырғытты.* С. Агиш.

**КӘРИМ** [*ғәр.*] *с. иҫк. кит.* **1.** Рәхимле, йомарт. / Ҡәҙерле, хөрмәтле.

**2.** (*баш хәреф менән*) Ир-ат исеме.

♦ **Ҡөрьән кәрим** изге ҡөрьән.

**КӘРИТӘ** [*рус.* корыто] *и. һөйл.* Ялғаш.

**КӘРКЕШ** *и.* Сабата бауы.

● *Ялҡау кәркешен урағансы, караңғы төн таң аткан.* Мәҡәл.

**КӘРКӘ** [1] *и. ҡар.* **керәкә.**

**КӘРКӘ** [2] *и. ҡар.* **кәркәдән.**

**КӘРКӘДӘН** [*ғәр.*] *и.* Йомро тояҡлылар ғаиләһенә ингән танау өҫтө мөгөҙлө, ҙур кәүҙәле имеҙеүсе хайуан; носорог (Африкала һәм көньяҡ-көнсығыш Азияла йәшәй).

**КӘРЛЕ** *с.* Ҡеүәтле, егәрле. *Бер ауылда бар икән бер ярлы ир, бик аҡыллы, бик йыуаш вә кәрле ир.* Ш. Тульвинский.

**КӘРЛӘ** [*рус.* карла] *и.* **1.** Бик бәләкәй кәүҙәле кеше; иргәйел. *Бына хәҙер ҙур кәүҙәле урынынан һикереп торор ҙа, теге кәрләне иҙер ҙә ташлар кеүек.* «Совет Башҡортостаны», 1967, 11 октябрь.

**2.** *с. мәғ.* Бик бәләкәй. *Кәрлә ағас. Кәрлә ҡайын. Кәрлә турғай.* ■ *Тау битләүҙәрендә, ҡаялар араһында кәрлә шыршылар, кәкре-бөкрө ҡайындар ғына етемһерәп ултыра.* Ә. Бикчәнтәев.

**КӘРЛӘПӘ** *и. диал. ҡар.* **кәрлә 1.**

**КӘРЛӘС** *и.* Киң ҡара-ҡаршы япраҡлы, йөнтәҫерәк һабаҡлы, түшәлеп ятҡан тамырлы, сәскәһе оҙон нәҙек емшәнле, күк йәки һарғылт төҫтәге китек тажлы ҡыр үләне.

**КӘРНИЗ** [*рус.* карниз ⟨ *гр.*] *и.* **1.** Йорттоң ҡыйығы аҫтынан буйлатып, киртләсләп ҡаҡҡан таҡта; ҡырлан. *Киртләсле кәрниз. Өй кәрнизе.* ■ *[Өйҙөң] кәрниздәре .. һырлап, биҙәкләп эшләнде.* Ф. Иҫәнғолов.

**2.** Мейестең иң өҫкө киртләсле өлөшө. *Мейес .. ап-аҡ итеп аҡбалсыҡланған да, йәшелле, күкле, ҡыҙыллы буяуҙар менән кәрниздәре, ҡашағалары биҙәкләнгән.* Ғ. Дәүләтшин.

**КӘРРӘ** [*ғәр.*] *р. һөйл.* Тапҡыр, ҡабат. *Дүрт кәррә барыу. Ике кәррә саҡырыу.* ■ *Ерәнсә сәсән өсөнсө кәррә: «Аш һал!» — тип ҡысҡырғас, ҡатыны шаршау артынан йүгереп килеп сыға.* «Ерәнсә сәсән».

♦ **Кәррә булыу** *диал.* теләгәнсә алып кинәнеү; мас булыу.

**КӘРРӘТ-БИКӘРРӘТ** [*ғәр. + фарс.*] *р. иҫк. кит.* Күп тапҡыр; ҡабат-ҡабат.

**КӘРСӘК** *с. диал. ҡар.* **ҡырҡыу** [2] 1.

**КӘРТ** [*рус.* карты] *и.* Дүрт төрлө һүрәт йәки тамғалар төшөрөлгән ҡатырға киҫәгенән торған уйын әйбере (ҡомарлы уйын уйнағанда, күрәҙәлек иткәндә ҡулланыла). *Кәрт таратыу. Кәрт уйнау. Кәрт һалыу.* ■ *Мостафа мулла ахмаҡ икән — кәрттә уйнап ҡыҙын отторған* (Халыҡ йырынан).

**КӘРТАБА** *и. диал.* Оҙон күкрәкле арба.

**КӘРТЕШКӘ** *и. һөйл.* Карточка.

**КӘРТЛӘНСЕК** *и. диал. ҡар.* **ҡатлансыҡ** [2].

**КӘРТӘ** *и.* **1.** Ҡырҡып боталған нәҙек оҙон ағас; һайғау. *Оҙон кәртә. Ҡапҡа кәртәһе. Кәртә ҡырҡыу.* ■ *[Атайым] йылға аша һалынған ике оҙон кәртәне бәүелдерә-бәүелдерә аръяҡҡа сығып китте.* Ғ. Аллаяров.

**2.** Шул ағастан буй-буй тотоп яһалған аралы ҡойма. *Баҡса кәртәһе. Йорт кәртәһе. Кәртә тотоу.*

**3.** *күсм.* Эш-тормоштағы ҡаршылыҡ, тотҡарлыҡ. *Кәртә ҡуйыу.* ■ *Халыҡты бер-береһенән айырған кәртә емерелде. Старателдәр шунда уҡ ауыл кешеләре менән аралашып бөттө.* Я. Хамматов. *Ҡауышмаҫлыҡ кәртәләр юҡ беҙгә совет илендә* (Халыҡ йырынан).

**4.** Мал торлағы; ҡура. *Кәртә башы. Кәртә ҡапҡаһы. Кәртә арты. Кәртә эсе. Кәртәләге мал. Малды кәртәгә ябыу.* **Ялан кәртә** мал ябыр өсөн уратып алынған башы асыҡ урын. *Беҙ йәйләүҙән бер саҡрым ерҙә, түңәрәк аҡланда, ялан кәртә ҡороп ебәрҙек.* В. Әхмәҙиев.

♦ **Кәртәгә инеү** 1) көтөүҙән туҡтау (малға ҡарата); 2) *күсм.* ипкә килеү, тәртипләнеү. *Өлкән улының .. кәртәгә инеренән тамам өмөт өҙгән ҡарун Әптелғәлим уны ҡарғап .. өйөнән ҡыуып сығара.* Ф. Иҫәнғолов.

● *Ғәйбәттең кәртәһе юҡ.* Мәҡәл. *Тәртәгә кермәгәнде кәртәгә кертеп булмай.* Мәҡәл.

**КӘРТӘ-ҠУРА** *и. йыйн.* Ихата һәм мал торлаҡтары. *Кәртә-ҡураны ныҡытыу.* ■ *[Байҙың] кәртә-ҡураһы бөтөн, йорт-йыһазы шәп, малтыуары күп, ти* (Әкиәттән).

**КӘРТӘЛӘНЕҮ** *ҡ.* **1.** *төш. ҡар.* **кәртәләү** [1]. *Кәртәләнгән баҡса.*

**2.** Яҡты ҡулса менән уратылыу (ай менән көнгә ҡарата). *Ҡояш яңы ғына сығып, тирә-яғы ҙур алҡа менән әйләндереп алынған ине. Ҡояштың был кәртәләнеүе .. бик һалҡын ваҡыттарҙа ғына була.* М. Ғафури. *Ай кәртәләнһә, буран була.* Һынамыш.

**КӘРТӘЛӘТЕҮ** *ҡ. йөкм. ҡар.* **кәртәләү** [1] 1. *Ишек алдын кәртәләтеү.*

**КӘРТӘЛӘҮ** [1] *ҡ.* **1.** Кәртә, ҡойма менән уратыу. *Һәр бер йорт алды ситән йә таҡта менән кәртәләп алынған.* М. Тажи.

**2.** *күсм.* Сик ҡуйыу; сикләү. *Кеше тормошонда ни теләмәй, тик теләкте выждан кәртәләй.* Ғ. Хәйри.

**КӘРТӘЛӘҮ** [2] *и. һөйл.* Ниҙелер уратып ҡуйған кәртә. *Баҫыу кәртәләүе. Кәртәләү ҡуйыу.*

**КӘРХАНА** [*фарс.*] *и. иҫк.* Завод; фабрика.

**КӘРҺЕҘ** *с.* Көс-ҡарыуы әҙ; көсһөҙ. **Үҙе кәрһеҙ, үҙе әрһеҙ** урынлы-урынһыҙға ҡатышҡан, тартына белмәгән әрһеҙ кешегә әйтелә.

**КӘРҺЕҘЛӘНЕҮ** *ҡ.* Кәрһеҙгә әйләнеү. *Кәрһеҙләнеп ҡалыу.*

**КӘРШЕ** *с.* **1.** Уралып, борош булып үҫкән (ағасҡа ҡарата). *Кәрше ағас. Кәрше түмәр.*

**2.** *күсм. һөйл.* Ипкә килмәҫ; тиҫкәре. *Кәрше кеше.*

● *Кәрше ағасҡа — ҡаты шына.* Әйтем.

**КӘРШӘ** *и. диал.* Ялғаш.

**КӘРШӘГӘ** [*рус.* корчага] *и. һөйл.* Мурҙа һымаҡ итеп үргән балыҡ тотоу ҡоралы.

**КӘРӘГЕНСӘ** *р.* Кәрәк булғанса, талап ителгәнсә; тейешенсә. *Кәрәгенсә алыу. Кәрәгенсә һөйләү. Кәрәгенсә эшләү.*

**КӘРӘГЕҮ** (кәрәк*г*) *ҡ.* Кәрәк булыу. *Кәрәккән*

*нәмә. Кәрәгеп куйыу.* ■ *Йөрәгемдә тереләй йолкоп бирәм, еңеү өсөн тик шул кәрәкһә.* Ғ. Амантай.

● *Якшы атка камсы кәрәкмәй, уңған кыҙға яусы кәрәкмәй.* Мәкәл.

**КӘРӘҘ** *и.* Бал корто менән иңкештең күҙәнәкле балауыҙы. *Бал кәрәҙе. Табаклы кәрәҙ.* ■ *Айыу ағас башына .. менеп, ботакка ултырып алған да солоктоң балын кәрәҙе-кәрәҙе менән һоғонорға тотонған.* Ж. Кейекбаев.

**КӘРӘҘЛЕ** *с.* Кәрәҙенән һурҙыртылмаған; балауыҙлы. *Кәрәҙле бал.*

**КӘРӘҘЛЕК** *и. диал.* Кәрәҙ.

**КӘРӘК** *мөн.* **1.** Талап ителеүҙе, мәжбүрилек, тейешлек төшөнсәһен белдерә. *Ни кәрәк? Кәрәк түгел. Кәрәк булыу. Кәрәк табыу. Барырға кәрәк. Белергә кәрәк.* ■ *Хәл йыйырға кәрәк балаңа, шуға кайттым, әсәй, далаға.* Ғ. Амантай. *Ил эшкәйҙәрен башкарырға арыҫландай батыр ир кәрәк* (Халык йырынан). **Кәрәк булһа** кәрәк сакта, кәрәк икән. *Беләм ул [Сәйҙел] кай вакыт, кәрәк булһа, төҙөлөштә лә куна торғайны.* Ғ. Сәләм. **Кәрәк икән** тейеш табылғанда, талап ителгәндә. *[Зөлхизә] һөйгәне артынан .. ете кат ер аҫтына төшөргә, кәрәк икән, уның өсөн ете кат үлергә лә әҙер.* З. Биишева. /*-*мак/*-*мәк формаһындағы кылымдар менән ситләтелгән һорау рәүешендә кулланыла. *Кайҙа бармак кәрәк. Нишләмәк кәрәк.* ■ *Ни нәмә тип ошо һыуыкта билдән карға батып йөрөмәк кәрәк.* Һ. Дәүләтшина.

**2.** *с. мәғ.* Талап ителгән, мотлак, мәжбүри булған. *Кәрәк кеше. Кәрәк нәмә. Кәрәк эш. Кәрәк сакта. // Донъя кәрәге. Кәрәге юк. Кәрәге бөтөү.*

**3.** *терк. функцияһында* Тиң һөйләм йәки тиң киҫәктәр алдынан кабатланып килеп, төп фекерҙән аңлашылған эш-хәлдең мотлак талап ителеүен белдерә. *Кейәү кәрәк карт булһын, кәрәк йәш булһын, уның янында кейәү үңере булырға тейеш.* М. Буранғолов. *[Абзал:] Хәҙер вакыт көтмәй: кәрәк киндереңде талкыттыр, кәрәк әҙер капсык алдырттыр.* С. Кудаш. / Кире һөйләмдә шарт һәм бойроҡ кылымдан килгән хәбәрҙәрҙе бер-береһенә бәйләп, мәғәнәне көсәйтә. *Эйелмәһә кәрәк һынып төшһөн.* ■ *Таң атмаһа кәрәк кояш калкһын — таңһыктарым канмай кайтмайым* (Халык йырынан).

♦ **Булырға (йәки булһа) кәрәк** фаразды белдергәндә әйтелә. *[Сәрби еңгә], йоклай алмағанымды һиҙеп булһа кәрәк, минең менән һөйләшә башлай.* Д. Юлтый. **Йәнеңә ни кәрәк** байлык, етешлекте белдергәндә әйтелә. *Йәнеңә ни кәрәк — барыһы ла бар.* **Күптән кәрәк ине** ниҙелер хуплағанда, урынлы тапканда әйтелә. **Кәрәге бар** хәжәте юк, тигән мәғәнәлә әйтелә. *[Йәнтимер:] Кәрәге бар ине, комсомол башым менән һинең пальто өсөн һатыулашып йөрөргә!* С. Агиш. **Кәрәге бер тин** кәмһетеп әйтелә. **Кәрәкте алыу** тейешле яза күреү. *Минең иптәштәр яуҙай куҙғалды һәм дошман шунда кәрәген алды.* Ғ. Ғүмәр. **Кәрәген биреү** 1) тейешле язаһын күрһәтеү; 2) самаһын аштырыу, коһорон кайтарыу. *Ашауҙың кәрәген биреү. Йоконоң кәрәген биреү. Эштең кәрәген биреү.* **Кәрәкме кәрәк** бик нык итеп. *Кәрәкме кәрәк бүрене бешә, ти, теге егет* (Әкиәттән).

● *Батырға ла ял кәрәк.* Әйтем. *Кәрәктең ауырлығы юк.* Әйтем.

**КӘРӘККӘН-КӘРӘКМӘГӘН** *с.* Теләһә ниндәй, юк-бар. *Кәрәккән-кәрәкмәгән һүҙ һөйләү. Кәрәккән-кәрәкмәгән нәмә йыйыу.*

**КӘРӘКЛЕ** *с.* Кәрәк булған, кәрәге булған. *Кәрәкле нәмә. // Кәрәкле табыу. Кәрәкле һанау.* ■ *Зилский иген эшләү өсөн кәрәкле бөтә корал-корамалды алдан ук әҙерләтеп куйған.* Ғ. Дәүләтшин.

♦ **Кәрәкле кишер (йәки кәбеҫтә) япрағы** кәрәкһеҙ кешегә мыҫкыллап әйтелә. *Колхозсылар [Хәсәнде], кәрәкле кәбеҫтә япрағы, һин генә кәрәк инең, кыйратырһың инде эшемде, тигән кеүек һүҙҙәр менән каршы алды.* С. Кудаш.

**КӘРӘКЛЕК** *и.* Кәрәк булғанлык; хәжәтлек, тейешлек. *Ни эшләргә кәрәклеген .. бик тиҙ төшөндөм.* С. Агиш.

**КӘРӘКҺЕҘ** *с.* Кәрәге булмаған, кәрәге юк. *Кәрәкһеҙ нәмә. // Кәрәкһеҙ табыу. Кәрәкһеҙ һанау.* ■ *[Сәйҙел:] Кайҙан белеп өлгөрҙөң һин, шундай хыял, семья рәхәтен.. Юк, Зәйнәбем, әле беҙҙең йәштә ул хыялға бирелеү кәрәкһеҙ.* Ғ. Сәләм.

**КӘРӘКҺЕНЕҮ** *к.* Кәрәк тип күреү, кәрәкле һанау. *[Әхтәмовтың] һүҙ куҙғатырға кәрәкһенмәүен һиҙгәс, Яхъя .. Әхтәмовтан айырылды.* А. Таһиров.

**КӘРӘК-ЯРАК** *и. йыйн.* Төрлө кәрәк нәмә. *Донъя кәрәк-ярағы. Өй кәрәк-ярағы. Туй кәрәк-ярағы.* ■ *Атайым .. рус ауылының баҙарында дегетен һатты. Он һәм башка кәрәк-яраҡтар алды.* С. Кулибай.

**КӘРӘМ** [*ғәр.*] *и. иҫк.* Йомартлык, киң күңеллелек.

**КӘРӘМӘТ** [*ғәр.*] *и.* Аптырарлык, ғәжәп нәмә; мөғжизә. *Кәрәмәт күрһәтеү. // Кәрәмәт нәмә.* ■ *Заятүләк тигәнең кәрәмәттең үҙе икән.* «Заятүләк менән Һыуһылыу». *[Йылкыбай:] Тағы бер бәрейҙе дөмөктөрһәк, шул үҙе бер кәрәмәт булмаҫмы?* (Әкиәттән). *[Марина:] Карасы, бына ниндәй кәрәмәт як икән ул минең тыуған ер!* М. Хәйҙәров.

♦ **Кәрәмәт ағасы** мәжүсиҙәрҙең аллалаштырып табына торған ағасы.

**КӘРӘСИН** [*рус.* керосин ⟨ *ингл.*] *и.* Нефттән алынған шыйык яғыулык. *Кәрәсин шәме. Кәрәсин һибеү.* ■ *Хасбулат олатай һандыктың .. тутыккан йоҙағына кәрәсин тамыҙа-тамыҙа көскә асты.* З. Биишева. *Кәрәсин — тракторҙар һәм реактив двигателдәр өсөн .. яғыулык.* Д. Бураҡаев.

**КӘСБИ** [*ғәр.*] *с. иҫк. кит.* Эш-тормош күнекмәһенән алынған. *Кәсби акыл. Кәсби сифат.*

**КӘСЕП** [*ғәр.*] *и.* **1.** Тормош сығанағы булған шөғөл; эш. *Төп кәсеп. Урман кәсебе. Һунарсылык кәсебе.* ■ *Тангауыр бер ырыуҙың исеме булған, мал аҫырау Тангауырҙың кәсебе булған.* «Бабсак менән Күсәк». *Башкортостан ерендә тәбиғәт шарттары төрлөсә, шул сәбәпле халыктың хужалык кәсептәре лә, һөнәр күнекмәләре лә бер төрлө түгел.* Н. Бикбулатов.

**2.** Файҙалы, аксалы өҫтәмә шөғөл. *Кәсепкә*

*йөрөү.* ■ *[Ташбаткандар] ялан эшенән бушап, кәсепкә тотонған: улар Турыбейә баткан күлендә һалабаш һыҙыра.* Ж. Кейекбаев. *Минең атай йәйләү осоронда дегет ҡайнатыу кәсебенә тотона торғайны.* С. Кулибай.

♦ **Кәсеп итеү** 1) ниндәй ҙә булһа берәй эш менән шөғөлләнеп, аҡса эшләү. *[Айбулат:] Мин берәр яҡта кәсеп итеп, өҫ-башымды бөтәйтәйем.* Һ. Дәүләтшина; 2) сауҙа эше менән шөғөлләнеү, сауҙа итеү; 3) *диал.* ғәҙәткә индереү; ғәҙәт итеү. *Көндөҙ йоклауҙы кәсеп итеп алған.*

**КӘСЕПЛЕ** *с.* Кәсебе булған. *Кәсепле кеше.*

**КӘСЕПЛӘНЕҮ** *к.* Берәй эш менән шөғөлләнеү. *Балыҡсылыҡ менән кәсепләнеү.* ■ *Көнтөн кәсепләнеүенә ҡарамаҫтан, уның донъяһы һис ҡотаймай, һаман шул ярлы Әптерәш.* Ғ. Хөсәйенов.

**КӘСЕР** [*ғәр.*] *и. мат.* Бер бөтөндөң өлөшөн күрһәткән һан. *Ҡатнаш кәсер. Унарлы кәсер. Ябай кәсер.*

**КӘСЕРЛЕ** *с. мат.* Кәсерҙәрҙән торған, кәсере булған. *Кәсерле һан.*

**КӘСИЛКӘ** [*рус.* косилка] *и. һөйл.* Сапҡыс. *Йомағол хәҙер кәсилкә менән бесән сабырға сыға.* М. Тажи.

**КӘСИР** [*рус.* косарь] *и.*, **кәсир бысаҡ** Сыра яра, иҙән ҡыра торған ҡалын ҙур бысаҡ.

**КӘСРӘ** [*ғәр.*] *и.* Ғәрәп орфографияһында: тартынҡы өн аҫтына ҡуйылған ҡыҫҡа «и» өнөн белдергән диакритик билдә.

**КӘСТРҮЛ** [*рус.* кастрюля ⟨ *нем.*] *и.* Аш бешерә торған ҡапҡаслы сөм металл һауыт. *Алюмин кәстрүл.*

**КӘСӘ** *и. кар.* **каса.**

**КӘСӘКӘЙ** *и. диал.* Кеҫәртке.

**КӘСӘФӘТ** *и. кар.* **касафат.**

**КӘҪ** *и.* Сиҙәм ерҙең аҡтарылған ҡыртышы. *Кәҫ ҡырҡыу.* ■ *Бына трактор кеше ҡулы теймәгән сиҙәмдең кәҫен аҡтара.* Р. Низамов. **Кәҫ өй** кәҫтән һалынған өй. *Тыштан шөкәтһеҙ күренгән .. кәҫ өйҙөң эсе бик иркен.* С. Кулибай. **Кәҫ таҡтаһы** һуҡаның, һабандың кәҫте әйләндереп һала торған өлөшө. *Ағас һабандың алғы өлөшө ағастан, ә кәҫ таҡтаһы, төрәне тимерҙән була.*

**КӘҪЛӘНЕҮ** *к.* Кәҫкә әйләнеү. *Кәҫләнгән тупраҡ.*

**КӘҪТАҠТА** *и. шул уҡ* **кәҫ таҡтаһы (***кар.* **кәҫ).**

**КӘҪТӘНДӘЙ** *с. кар.* **киҫтәндәй.**

**КӘҪӘ: кәҫә бал** умартала ҡышлаған бал.

**КӘТЕРМӘС** *и.* Киптерелгән телемле икмәк; шөкәрә.

**КӘТИЛКӘ** [*рус.* каталка] *и. диал.* Иген ташы [*кар.* **таш**].

**КӘТИП** [*ғәр.*] *и. иҫк.* **1.** Яҙыусы, әҙип. / Эш ҡағыҙҙары яҙыу эшендәге кеше; секретарь. *Мәжлестә төлкө — кәтип, бүре — рәис.* М. Ғафури.

**2.** (*баш хәреф менән*) Ир-ат исеме.

**КӘТЛИТ** [*рус.* котлета] *и. һөйл.* Котлет.

**КӘТМЕК** *с. диал.* Күпкәк (балаға ҡарата).

**КӘТМӘ** *и. диал.* Ҡолаҡ ҡабырсағы. *Бара-бара ла атын туҡтата Туғаҙаҡ. Усын ҡолаҡ кәтмәһенә ҡуйып тыңлай.* Т. Килмөхәмәтов.

**КӘТМӘЙЕҮ** *к. һөйл.* Ҙур булып тупайып, алға сығыу, тәзмәйеү (эскә ҡарата). *Эсе кәтмәйеп, саҡ атлай.*

**КӘТМӘН** [1] *и.* **1.** Арҡыры башлы көрәк рәүешендәге ҡорал; тәпке. *Кәтмән менән картуф күмеү.*

**2.** *күсм.* Аяҡтың бәкәлдән түбәнге өлөшө; аяҡ башы. *Кәтмән һөйәктәре.*

**КӘТМӘН** [2] *и.* **1.** *иҫк.* Бер биҙрә һыйышлы ағас һауыт; күнәк. *Кәтмән-кәтмән бал.*

**2.** Хужалыҡтағы төшөмдән, яңы игендән күрше-күләнгә сығарылған өлөш. *Кәтмән биреү.* ■ *[Ҡатындар:] Ярҙай булып үҫкән, ҡуйсы ла, Кинйәбикә һинән кәтмән. [Кинйәбикә:] Кәтмәне лә булыр, бутҡаһын да ашарһығыҙ, йәл түгел.* Ж. Кейекбаев.

**КӘТМӘНСУТ** *и. диал.* **1.** *кар.* **кәтмән** [1].

**2.** Бағау.

**КӘТТӘ** *с. һөйл.* **1.** Бик яҡшы. *Тәбиғәттең кәттә сағы. // Күлдәге кәттә тегелгән.* ■ *Вагондың иң кәттәһе. Бүлмәләре көҙгөлө, өҫтәлле. Ултыра, ята торған ерҙәре бәрхәт, етмәһә пружиналы.* Ғ. Хәйри.

**2.** Бик ғорур, һауалы; эре. *Кәттә кеше. // Кәттә генә һөйләшеү.* ■ *Милли байҙар тирәһендә йөрөгән .. кәттә зыялый егеттәр халыҡты советҡа ҡаршы ҡоторторға кереште.* М. Ғафури. *Мыйыҡты борам, кәттә генә баҫып ҡарап торам йәшелкенсәктең уйнағанын.* Ш. Насыров.

**КӘТҮК** [*рус.* катушка] *и.* Баш-баштары түңәрәк, эсе ҡыуыш булған ҡыҫҡа ғына үҙәк рәүешендәге еп, сым һ. б. нәмәләр урау өсөн ҡулланылған ҡулайлама; сүре. *Епте кәтүккә урау.* ■ *Ҡорос сымдар кескәй кәтүктәргә нәфис нурҙар булып урала.* Ә. Ғиззәтов. / Шуға уралған епте иҫәпләү берәмеге. *Ике кәтүк аҡ еп.*

♦ **Кәтүк танау** *һөйл.* бәләкәй танау.

**КӘҮ** *и. кар.* **кәй.**

**КӘҮАҠИП** [*ғәр.*] *и. иҫк. кит.* Йондоҙ. *Кәүакиптәр! Янып көйрәт, ҡыҙыл нурҙар ташып аҡһын!* Б. Мирзанов.

**КӘҮГӘҘӘК** *с. диал.* Ҡыуғаҙаҡ.

**КӘҮГӘК** *с. диал.* Кәүгәсел.

**КӘҮГӘСЕЛ** *с.* **1.** Бәләкәй генә нәмәнән бәлә һалып, оло тауыш ҡуптарыусан; бәләсел. *Кәүгәсел кеше. Кәүгәсел булыу.*

**2.** *диал.* Түҙемһеҙ, сыҙамһыҙ.

**КӘҮҘӘ** *и.* **1.** Йән эйәләренең баш-аяғынан башҡа төп тән өлөшө. *Кеше кәүҙәһе.* ■ *[Егет дейеүҙен] ике башын бер юлы өҙә сапҡан, кәүҙәһен тураҡлап, әрҙәнә кеүек итеп өйөп ҡуйҙы, ти* (Әкиәттән).

**2.** Йән эйәләренең бөтә буйы; буй-һын. *Кәүҙәне тура тотоу.* ■ *Бөтә кәүҙә ҡыйралып төшөп бара. Аяҡтар ойоған, атлай алмайым.* Д. Юлтый. *Зөләйха, .. ер хуры һин, һындарың гүйә фәрештә кәүҙәһе.* Салауат Юлаев. / *күсм.* Йән эйәһенә ҡарата. *Туҡмаҡ саҡлы ғына бер кәүҙә мыш-мыш килеп ята биләүҙә.* М. Кәрим. *Ҡайҙа барһам, ҡайҙа торһам да бәхетһеҙ кәүҙә мин.* Ш. Бабич. **Ҡоро кәүҙә** ҡоро буй йөрөткән эшлекһеҙ кешегә ҡарата әйтелә.

**3.** Өҫ кейеменең билдән юғары өлөшө. *Күлдәктең кәүҙәһе ҡыҫҡа булған.*

● *Аҡ кәүҙәңдең кәҙерен сырхау булғас белерһең.* Әйтем.

**КӘҮҘӘЛЕ** *с.* Кәүҙәгә ҙур. *Кәүҙәле егет.*

**КӘҮҘӘЛӘНДЕРЕЛЕҮ** *к. төш. кар.* **кәүҙәләндереү.** *Әкиәттәрҙә ул [Аҡбуҙат] һәр ваҡыт ыңғай итеп кәүҙәләндерелә.* К. Мәргән.

**КӘҮҘӘЛӘНДЕРЕҮ** *к.* Әҙәби образдар аша биреү, һүрәтләү, сағылдырыу (әҙәбиәттә, сәнғәттә һ. б.) *Әҙәбиәт тормошто художестволы образдар аша кәүҙәләндерә.* Н. Нәжми.

**КӘҮҘӘЛӘНЕҮ** *к.* **1.** Һүрәт булып, күҙ алдыңа баҫыу; һүрәтләнеү. *Үткән көндәр иҫтәлеге береһе артынан икенсеһе кәүҙәләнеп үтә торҙо.* Һ. Дәүләтшина.

**2.** Әҙәби әҫәрҙә, сәнғәттә һ. б. сағылыш алыу, сағылыу. *Театрҙа кәүҙәләнгән образдарҙы әҙәби әҫәрҙәге һымаҡ китапҡа ла күсереп булмай.* С. Агиш.

**КӘҮҘӘЛӘНЕШ** *и.* Бер нәмәнең икенсе нәмәлә күренгән һөҙөмтәһе; сағылыш. *[Йәш агроном] Бануға яңылыҡтың йәнле кәүҙәләнеше булып тойола ине.* Ә. Вәли.

**КӘҮҘӘҮ** *к. кар.* **ҡауҙау.**

**КӘҮЕЗ** [*гәр.*] *и. һөйл.* Быуаны асып-яба торған ҡулайлама. *Байгильдин .. канау янына килеп, .. кәүездә тотош асып ебәрҙе. Һыу шарлауыҡ булып аға башланы.* Х. Ғиләжев.

**КӘҮЕК** *с.* **1.** Тос түгел, еңел, осоҡ. *Кәүек бойҙай. Кәүек бесән.*

**2.** Мыртланған. *Кәүек ағас.*

**3.** *күсм. диал.* Йоҡа, еңел (кешегә ҡарата).

**КӘҮЕШ** [1] [*фарс.*] *и.* Йоҡа табанлы итеп күндән тегелгән ҡунысһыҙ аяҡ кейеме (ситек тышынан кейелә). *Семәрле ҡыҙыл кәүеш. Кәүешле ситек.*

**КӘҮЕШ** [2] *с. һөйл.* Бер яҡҡа ҡыйшайған; ҡыйыш, салыш. *Кәүеш ауыҙ.* ■ *[Ҡаҫҡындар] тыранса баш, кәүеш, шалҡы йортло бер ауылға барып еткәндәр.* В. Вәлит.

♦ **Тәүге эш кәүеш** тәүге эш уңмай тигән мәғәнәлә әйтелә.

**КӘҮЖЕК** *с. һөйл.* Кәүжәйгән. *Кәүжек ауыҙ.*

**КӘҮЖӘЙЕҮ** *к. һөйл.* Бер яҡҡа ҡыйшайыу, бәлшәйеү. *Теше төшөп, ауыҙы кәүжәйеп, күҙе кепесләнеп бөткән карт-ҡороға тиклем .. урамға сыҡҡан.* Ш. Шәһәр.

**КӘҮЖӘЙТЕҮ** *к.* Салшайтыу, бер яҡҡа ҡыйшайтыу. *Ауыҙҙы кәүжәйтеү.*

**КӘҮСӘР** [*гәр.*] *и.* **1.** Татлы һыу, баллы шәрбәт. ■ *Тыуаш үҙенең балдан татлы, кәүсәрҙән тәмле .. ирендәре менән бер әп итә.* С. Агиш.

**2.** Дини ҡарашса, ожмахтағы һыуы татлы күл. *Кәүсәр һыуы. Кәүсәр тамсылары.* ■ *Ысын ебәктән ине тәсбих бауҙары, төймәһенең барыһы кәүсәр гәүһәре.* Ш. Бабич. **Хәүзе кәүсәр** кәүсәр күле. *Миңә йәннәт .. ҡырҙарың. Ниндәй тәмле хәүзе кәүсәрҙән дә артыҡ һыуҙарың.* Ғ. Хәйри.

**КӘҮШЕК** *с.* **1.** Кәүшәйгән. *Кәүшек биҙрә.*

**2.** *күсм. диал.* Ҡылтым.

**КӘҮШӘЙЕҮ** *к. һөйл.* Ҡыйшайыу, йәмшәйеү. *Кәүшәйгән биҙрә.* ■ *[Мөғәллимәнең] сырайы һытылды, ауыҙы кәүшәйҙе.* А. Таһиров.

**КӘҮШӘЙТЕҮ** *к. һөйл.* Ҡыйшайтыу, йәмшәйтеү. *Солтангәле ауыҙын кәүшәйтеп һыҙғыра-һыҙғыра .. Ғәйзулла эргәһенә килеп баҫты.* Я. Хамматов.

**КӘҮШӘК** *с.* **1.** Тығыҙ булмаған, беше түгел, йомшаҡ. *Кәүшәк ағас.*

**2.** *диал. кар.* **көпшәк** 2.

**КӘҮШӘКЛӘНЕҮ** *к.* Кәүшәккә әйләнеү.

**КӘҮШӘҢЛӘҮ** *к. диал.* Аушаңлау.

**КӘҮӘК** *и.* **1.** Онталып бөткән ваҡ бесән.

**2.** *диал. кар.* **кәбәк** 1.

**КӘҮӘКЛӘНЕҮ** *к.* Кәүәккә әйләнеү. *Бесән кәүәкләнеп бөткән.*

**КӘФАЛӘТ** [*гәр.*] *и. иҫк. кит.* Үҙ өҫтөңә алған яуаплылыҡ; йөкләмә. *Ғәйебе аҙ булғандар .. старшинаның кәфаләтенә бирелде.* М. Һаҙыев.

**КӘФАРӘТ** [*гәр.*] *и. иҫк.* Ғәйепте юйыу өсөн эшләнгән эш. *Хаин булһам туләрмен кәфарәт.* Ш. Бабич.

**КӘФАРӘТЛӘҮ** *к. иҫк.* Ғәйепте юйыу, йыуыу. *[Мулла:] Һеҙҙең эш — уларҙың [үлгәндәрҙең] донъяла ҡылған гөнаһтарын кәфарәтләрлек эштәр эшләү.* Т. Хәйбуллин.

**КӘФЕН** [*гәр.*] *и.* Мәйетте төрөп ерләй торған аҡ туҡыма. *Кәфенгә төрөү. Кәфенһеҙ ерләү.* ■ *Өс ҡатын Майгөл әбей үҙе иҫән сакта әҙерләп ҡуйған аҡ киндерҙән кәфен тегә.* К. Мәргән.

**КӘФЕНЛЕК** *и.* Кәфенгә тәғәйенләнгән әйбер. *Кәфенлек алыу. Кәфенлек әҙерләү. // Кәфенлек ситса.*

**КӘФЕНЛӘҮ** *к.* Кәфенгә төрөү. *Йыназа уҡыу, кәфенләү, саҙаҡа биреү кеүек дини мәрасимдарҙың береһе лә уның [Сәмиҙең] кәбере өҫтөндә үтәлмәне.* Д. Юлтый.

**КӘФИЛ** [*гәр.*] *и. иҫк.* Үҙ өҫтөнә, үҙ яуаплылығына ниҙер алған кеше.

● *Үҙ малыңа дошман булһаң, кәфил бул.* Мәҡәл.

**КӘҺЕЛДӘҮ** *к.* Йомшаҡ ҡына йүткереү, кәһ-кәһ итеү. *Кәһелдәп кенә йүткереү.*

**КӘҺЕМ-КӘҺЕМ** *оҡш. кар.* **кәһ-кәһ.**

**КӘҺ-КӘҺ** *оҡш.* Йомшаҡ ҡына йүткергән тауышты белдергән һүҙ. *Кәһ-кәһ килеү. Кәһ-кәһ йүткереү.*

**КӘҺКӘҺӘ** *и. кар.* **ҡаһҡаһа.**

**КӘҺӘРТКЕ** *и. диал.* Кеҫәртке.

**КӘШЕН** *и.* **1.** Быҙау тиреһенән йөн яғын тышҡа ҡуйып теккән моҡсай; сәрмә. *Аҙыҡты кәшен менән йөрөтөү.*

**2.** *күсм.* Һыйыр малының эсе ташып, көйөш ала алмаған ауырыуы (тиренән тегелгән моҡсай йәки итек ҡунысы менән һуҡҡылап имләгәндәр). *Кәшен булыу.*

**КӘШЕФ** [*гәр.*] *и. иҫк.* Билдәһеҙ нәмәнең асылыуы, фаш ителеүе.

♦ **Кәшеф итеү** шәйләү, күреү. *Йыраҡтан ғына, күпер өҫтөнән берәүҙең килгәнен кәшеф иттем.* М. Фәйзи.

**КӘШКИ** *ымл. кар.* **кашки.** *[Абдулла ағай:] Кәшки, үҙем башҡа тәғлим-тәрбиә мөхитенән сыҡһам да Ленин тәғлимәттәрен раҫлайым.* С. Кулибай.

**КӘШКӘЙ** *с. диал. кар.* **кәкес** 1.

**КӘШКӘЙЕҮ** *к. һөйл.* Ҡалтайып өҫкә ҡарау (мәҫ. таҡтаның, аяҡ кейеменең башы).

**КӘШМӘК** *и.* **1.** Бер нисә бүрәнәнән бәйләнгән

бәләкәй һал. *Кәшмәк бәйләү. Кәшмәк менән ағыу. Кәшмәк менән һыу аша сығыу.* ■ *Көндәрҙән бер көндө кисен бер нисә кеше үҙ-ара һүҙ ҡуйышалар ҙа, кәшмәк бәйләп, утрауға китәләр.* Ә. Гәрәев.

**2.** Һалдың бер быуыны. *Биш кәшмәкле оҙон һал Ағиҙел өҫтөнән шыуып килә.* «Ағиҙел», 1980, № 4.

**КӘШМӘКЛӘҮ** *ҡ.* Кәшмәк итеп бәйләү. *Бүрәнәне кәшмәкләү.* / Һыуға батырыу өсөн киндер, етен көлтәләрен ҡуша бәйләү. *Тарманы кәшмәкләү.*

**КӘШТЕР-КӨШТӨР** *р. һөйл.* Бер ыңғай менән, әкрен генә. *Кәштер-көштөр генә эшләп йөрөү.*

**КӘШТӘ** *и.* **1.** Төрлө нәмә һалыу өсөн һикәлтәләп ҡуйылған буй таҡта. *Китап кәштәһе. Шкаф кәштәһе. Һауыт-һаба кәштәһе.* ■ *Урҙә бер киң таҡтанан кәштә яһалып, уның өҫтөнә икмәк-тоҙ, сәй-шәкәр, табаҡ-туҫтаҡ һәм башҡа нәмәләр ҡуйылған.* Ғ. Дәүләтшин.

**2.** *диал.* Урҙа.

**3.** *диал. ҡар.* **ҡыра** [1] 2. *Бесән кәштәлә ҡалды.*

**КӘШТӘЛӘНЕҮ** *ҡ.* **1.** *төш. ҡар.* **кәштәләү.**

**2.** Баҫҡыс рәүешендә киртләсле булыу. *Йылға кәштәләнеп торған ике ҡая араһынан .. аға.* «Алдар менән Зөһрә».

**КӘШТӘЛӘҮ** *ҡ.* Кәштә (1 мәғ.) ҡуйыу.

**КӘШФИӘТ** [*ғәр.*] *и. иҫк. кит.* Уйлап табылған нәмә; асыш.

**КӘШШАФ** [*ғәр.*] *и. иҫк.* **1.** Бер нәмәне тикшереп табыусы, асыусы.

**2.** (*баш хәреф менән*) Ир-ат исеме.

**КӘШӘЛ** *с. диал.* Кәрлә.

**КӘШӘЛӘҮ** *ҡ.* **1.** Боҙолоп сейләнеү. *Аяҡтың бармаҡ аралары кәшәләнгән.* ■ *Бит-кул ярылып кәшәләп бөттө. Саҡ ҡына ҡағылдыңмы, ирендәр ҡанай.* Ғ. Ғүмәр.

**2.** *диал. ҡар.* **түләү** 2.

**КӘШӘМИР** *и. ҡар.* **кешмир.**

**КӘШӘНӘ** [1] [*фарс.*] *и.* Ҡәбер өҫтөнә ҡуйылған ҡоролма йәки уны уратып алған таш ҡойма. *Шишмә районындағы 12—13 быуаттарҙа төҙөлгән Хөсәйенбәк кәшәнәһе башҡорт халҡы тарихының йәнһеҙ шаһиты булып тора.* Р. Кузеев.

**КӘШӘНӘ** [2] *и. диал.* Кәбәк.

**КӘШӘНӘЛӘҮ** *ҡ.* Кәшәнә [1] ҡуйыу, ҡәберҙе кәртәләү.

**КЮВЁТ** [*рус.* ⟨ *фр.*] *и.* Оло юлдың ике яҡ ситендәге канау. *Кюветка тайып төшөү.* ■ *Өс километр юлға ҡалын итеп ҡомташ һалынған, тигеҙләнгән, кюветтар таҙартылған.* «Совет Башҡортостаны», 1965, 29 июль.

# Ҡ

**Ҡ** [ҡа] Башҡорт алфавитының ун бишенсе хәрефе.

**ҠАБА** [1] *и.* Киндер йәки етендән еп иләү өсөн ҡулланылған тараҡ башлы ҡолға. *[Ҡарсыҡ] ҡабаһынан көнйәләһен һауырға тотондо.* Ғ. Хәйри. **Ҡаба арты** киндер йәки етендең ҡабанан үткәргәндән һуң ҡалған сүбәге. **Ҡаба төбө** ҡабаны йәки ҡолғаны ултыртыу өсөн йәтешләп эшләнгән бер башы тишекле таҡта. *[Гөлйөҙөм] ҡаба төбө алып ҡайтып йөн эше менән булышырға .. Хәмдиә еңгәһенә китте.* Һ. Дәүләтшина.

**ҠАБА** [2] *и.* **1.** Ағас һабандың кәҫ таҡтаһын беркетеп ҡуя торған кәкре ағастан торған өлөшө.

**2.** Ҡаушырып, ҡоршап ҡуйған мөйөштө беркетә торған кәкре тимер.

**ҠАБАҒАН** *с. һөйл.* Тешләй торған ғәҙәтле (эт һ. б. хайуандарға ҡарата). *Ҡабаған эт.*

♦ **Бер ҡабаған һүҙ** тупаҫ, яман һүҙ. *Былар шул тиклем татыу булған, бер-беренә бер ҡабаған һүҙ әйтмәгән* (Әкиәттән).

● *Ҡабағандан ҡаптырма, тибәгәндән типтермә.* Мәҡәл.

**ҠАБАҒАС** *и. ҡар.* **ҡаба** [1].

**ҠАБАЙ** *и. диал. ҡар.* **көртлөк** [1].

**ҠАБАҠ** [1] *и.* **1.** Емерелеп, һөҙәкләнеп, үлән, ағас үҫеп бөткән иҫке яр; ҡашлаҡ. *Яр ҡабағы. Ҡабаҡ аҫты. Ҡабаҡ башы. Ҡабаҡ бите. Ҡабаҡ буйы. Ҡабаҡҡа менеү. Ҡабаҡты сығыу.* ■ *Теге кеше .. һулаҡайға боролдо ла ҡабаҡ ҡырлап китте.* Ж. Кейекбаев. **Тау ҡабағы** тау итәгенең ярланыңҡырап ҡапыл төшкән урыны.

**2.** (*йәки* **күҙ ҡабағы**) Күҙҙең ҡаштан түбәнге өлөшө. *Ҡапыс ҡабаҡ. Шешмәк ҡабаҡты күтәреү. Ҡабаҡты төшөрөү.* ■ *Мин тубыҡланып ултырҙым. Күҙ алдары ҡараңғылана, күҙ ҡабаҡтары ауырая башланы.* С. Ҡулибай. *Күҙҙе һаҡлаған күҙ ҡабағындай, беҙ торабыҙ һинең һағыңда.* М. Хәй.

♦ **Күк ҡабағы асылыу** *ҡар.* **күк** [3]. **Ҡабаҡ аҫтынан** һөҙөп, аҫтан асыу менән (ҡарау). *Тимергәле ҡарт сынаяғына сәйен ҡоя-ҡоя улына ҡабаҡ аҫтынан ғына күҙ һалды, өндәшмәне.* Ғ. Дәүләтшин. **Ҡабаҡ күтәреү** тормошто еңеләйтеү; бауыр күтәреү. *Минең тик-тик кенә ҡабаҡ күтәргән саҡ ине.* М. Ҡулаев. **Ҡабаҡҡа ҡарыш ҡар яуҙырыу** төҫкә асыу сығарыу. **Ҡабаҡты емереү** *шул уҡ* **ҡашты емереү** (*йәки* **йәмрәйтеү, төйөү**) *ҡар.* **ҡаш** [1].

**ҠАБАҠ** [2] *и.* **1.** Оҙон елеле, эре һары сәскәле, эре йомро йәшелсәле баҡса үҫемлеге. *Ҡабаҡ ултыртыу.*

**2.** Шул үҫемлектең йәшелсәһе. *Ҡабаҡ бутҡаһы. Ҡабаҡ бәлеше. Ҡыҙҙырылған ҡабаҡ.* ■ *Бында [баҡсала] үҫте ҡабаҡтар, ҙур булып дәү табаҡтан ..* Ғ. Ғүмәр. **Аш ҡабаҡ** кеше ашай торған эре ҡабаҡ. **Ас ҡабаҡ** ас итле, аҡһыл йәшел төҫлө ваҡ ҡабаҡ. **Сәллә ҡабаҡ** түңәрәк, ялпаҡ аҡ ҡабаҡ. **Таш ҡабаҡ** нәҙек билле, оҙонса күк ҡабаҡ.

**ҠАБАҠ** [3] [*рус.*] *и. иҫк.* Революцияға тиклемге Россияла иң түбән дәрәжәләге эскелек ханаһы.

**ҠАБАҠЛАНЫУ** *ҡ.* Ҡабаҡҡа [2] тумалыу, ҡабаҡлы булыу.

**ҠАБАҠСЫ** *и. иҫк.* Ҡабаҡ [3] тотҡан кеше. *Нигмәтулла оҙаҡ уйланып торғандан һуң ҡабаҡсыға китте.* Я. Хамматов.

**ҠАБАЛАН** *с.* **1.** Йәһәт башҡарылырға тейешле, тиҙ-тиҙ башҡарылышлы; ашығыс. *Ҡабалан яуап.* // *Ҡабалан кейенеү. Ҡабалан һөйләү.* ■ *Әсәй ҙә шулай ашыҡты, самауырын йыйҙы ҡабалан.* С. Агиш.

**2.** Ашығып, ҡабаланып эш итеүсән. *Ҡабалан кеше.*

● *Ҡабаландың аты өҙлөгөр, ялҡауҙың аты*

*һөрләгәр.* Мәҡәл. *Ҡабалан эшкә аҡыл эйәрмәй.* Мәҡәл.

**ҠАБАЛАНДЫРЫУ** *ҡ.* Тиҙ ҡуҙғалырға, йәһәт эшләргә өндәү; ашыҡтырыу. *Китергә кабаландырыу. Ҡайтырға ҡабаландырыу.* ■ *[Әбей Саниәга:] Сәй эсмәнек әле, яңы ғына килеп төштө бит улар, һин ҡайтҡас, бергә-бергә эсербеҙ, тип тә ҡабаландырманым.* Н. Мусин.

**ҠАБАЛАН-ҠАРҺАЛАН** *р.* Тиҙ-тиҙ, ашыҡ-бошоҡ. *Ҡабалан-ҡарһалан эшләү.* ■ *Айытбай ҡабалан-ҡарһалан атын екте лә, тамағына ла ашап тормай юлға сыҡты.* М. Хәйҙәров.

**ҠАБАЛАНЫУ** *ҡ.* Тиҙ-тиҙ йәһәтләп ҡуҙғалыу; ашығыу. *Ҡабаланып атлау. Ҡабаланып эшләү.* ■ *Малай бер ҙә ҡабаланмай, атты үҙ яйына ғына ҡуйып бара.* М. Тажи. *Хушлашайым тип, мин ҡабаланып килдем әле һиңә бик иртә.* Х. Ҡунаҡбай.

**ҠАБАЛАНЫШЫУ** *ҡ. урт. ҡар.* **ҡабаланыу.** *Улар ҡабаланышып аллы-артлы сығып киттеләр.* Һ. Дәүләтшина.

**ҠАБАЛАУ** [1] *ҡ.* **1.** Ҡабаға [1] ҡуйыу. *Ҡабалап иләү.*

**2.** Ҡаба тарағынан үткәреү. *Ҡабалап алыу.*

**ҠАБАЛАУ** [2] *ҡ.* Ҡаба [2] (2 мәғ.) ҡуйыу. *Умарталың таҡталары ҡабалап тоташтырыла.*

**ҠАБАЛДЫР** *с. диал.* Ҡалбыр. *Тебейек аҡсарлаҡтан ҡабалдырыраҡ була.*

**ҠАБАН** *и.,* **ҡабан сусҡаһы** Ҡыр сусҡаһы. *Беҙгә шыр ҡыуаҡлыҡ эсенә бик үк инергә ярамай ине. Ни өсөн тиһәң, ҡабан сусҡаһы бик хәтәр йәнлек, аңғармаҫтан һөжүм итеп, хәнйәрҙәй ике оҙон теше менән өҙгөләп ташлауы бар.* С. Кулибай. *Һөйләһә һөйләй бирһен ҡара табан, ҡушылмаҫ аҡ маралға ҡара ҡабан.* М. Аҡмулла.

♦ **Ҡабан теш** *ҡар.* **теш** [1] **1.**

**ҠАБАРСЫҠ** *и.* Ҡабарып сыҡҡан эсе һыулы ҡыуыҡса.

**ҠАБАРСЫТЫУ** *ҡ.* Өйкәлдереп, ҡабарсыҡлы итеү. *Ҡулды ҡабарсытыу.*

**ҠАБАРСЫУ** *ҡ.* Эсе һыулы ҡыуыҡ булып өрөлөү (тәнгә ҡарата). *Ҡабарсып сығыу.* ■ *Көнө буйы йөрөүгә аяҡ табандары ҡабарсый.*

**ҠАБАРТҠЫС** *и. тар.* Сабылған игенде әйләндерә торған кәкре осло һәнәк.

**ҠАБАРТМА** *с.* Эсе ҡамырҙан йоҡа итеп йәйеп, табала бешерелгән икмәк. *Өмөгөлсөм ҡабартма ҡабартып ала ла, май һөртөп, ире менән бейеменең алдына ҡуя.* З. Биишева.

**ҠАБАРТЫЛЫУ** *ҡ. төш. ҡар.* **ҡабартыу 1, 2, 4.** *Ҡабартылған хәбәр.*

**ҠАБАРТЫУ** *ҡ.* **1.** Ҡаҡҡылап, тырпайтып, ҡалҡытыу. *Бесәнде ҡабартыу. Сәсте ҡабартыу.* ■ *Ул [Фәхри] кәртәгә уҙҙы һәм һыйыр аҫтына .. йәйгән һаламды ҡабартҡыланы.* Б. Бикбай. *Уҫал эттәр йөндәрен ҡабартып, тыпырсынып, олоп өрәләр.* Т. Йәнәби. / Өрөлдөрөп, ҙурайтыу. *Ел болотто ҡабарта.*

**2.** *күсм.* Саманан уҙҙырып, көсәйтеү; арттырыу. *Һүҙҙе ҡабартыу. Ыҙғышты ҡабартыу.* ■ *Уларҙың [һунарсыларҙың] күпселеге күргәнен шаштырып, ҡабартып ебәрә торған кешеләр ине.* С. Кулибай.

**3.** Тулыштырып, бүлтәйтеү. *Ирende ҡабартыу.*

**4.** Табаға йәйә һалып бешереү. *Көлсә ҡабартыу. Ҡабартма ҡабартыу.*

♦ **Һырт ҡабартыу** *ҡар.* **һырт.**

**ҠАБАРЫНДЫРЫУ** *ҡ.* Маҡтанырға юл ҡуйыу, ҡабарынырға сәбәп биреү. *Кешене маҡтап ҡабарындырыу.*

**ҠАБАРЫНҠЫ** *с.* **1.** Ҡабарып, тупайып торған. *Директор көрпәк, ҡабарынҡы йөҙөнә йылмайыу гәләмәте сығарҙы.* Ф. Иҫәнғолов.

**2.** *күсм.* Саманан, ғәмәлдән арттырылған; ҡабартылған. *Ул [Мөхәмәтов] ҡабарынҡы һүҙҙәр менән бик оҙаҡ һөйләшмәксе ине.* Ғ. Әхмәтшин.

**ҠАБАРЫНЫУ** *ҡ.* **1.** Асыу белдереп һырт йөнөн ҡабартыу. *Ишек алдында ҡабарынып, гөлдөрләп ата күркә йөрөй.* / *күсм.* Асыуланып туҙыныу.— *«Ни көтәһегеҙ? Әллә атығыҙҙы ла мин егер тиһегеҙме, эттән пәйҙә булғандар!» — тип Хәби бай ҡабарынып тора ине.* Т. Хәйбуллин.

**2.** *күсм.* Маҡтанып ҡуҡрайыу; кәпәренеү. *Ниңә инде урынға керҙем тип, күркә төҫлө ҡабарынып йөрөргә?* С. Агиш.

**ҠАБАРЫНЫШЫУ** *ҡ. урт. ҡар.* **ҡабарыныу.**

**ҠАБАРЫУ** *ҡ.* **1.** Ҡапайып, тырпайып ҡалҡыу. *Ҡабарып торған сәс. Ҡабарып ятҡан бесән. Ҡабарған мамыҡ мендәр.* ■ *Аҡ болотҡай менән ай күк болот ҡабара ла яуа ҡар булып* (Халыҡ йырынан). / Өрөлөп күпереү. *Ҡул ҡабарыу. Аяҡ ҡабарыу.* / *күсм.* Асыуланып ҡыҙыу. *Мансаф кеҫәһенән газета сығарып уҡый башланымы — Рәүфә ҡабара ла китә.* Ә. Вәли.

**2.** Әсеп, артып күтәрелеү (ҡамыр тураһында). *Икмәк күнәгендә ҡамыр икән дә ул ҡабарған.* К. Кинйәбулатова.

**3.** Тулышып ҡалҡыу; бүлтәйеү. *Ҡан тамырҙары ҡабарып сыҡҡан. Ирене ҡабарып тора.* ■ *Ай, Уралым, Уралым, ҡуш имсәктәй ҡабарып, ҡалҡып торған Уралым* (Ҡобайырҙан). / Өрөлөп күтәрелеү. *Ҡабарып бешкән икмәк.*

**4.** *күсм.* Саманан уҙып көсәйеү. *Ыҙғыш ҡабарҙы.* ■ *Иген тураһында һүҙ ҡабарып китте.* Б. Бикбай.

**5.** *ҡар.* **ҡабарсыу.**

♦ **Асыу ҡабарыу** *ҡар.* **асыу 1. Һырт ҡабарыу** *ҡар.* **һырт.**

**ҠАБАТ** [1] *и.* **1.** Һанды белдергән һүҙҙәр менән килеп, эш-хәлдең тәҡрарланышын белдерә; тапҡыр, мәртәбә. *Бер ҡабат. Өс ҡабат. Күп ҡабат.* ■ *[Әбей] әҙерләп ҡуйған ҡатығын әллә нисә ҡабат ҡулына алып тукыны.* Ғ. Дәүләтшин. *Тәүге ҡабат бергә бесән саптыҡ һөҙәк кенә тауҙың битендә.* Р. Ғарипов.

**2.** Бер нисә нәмәнең эргәләш йәки аҫлы-өҫлө торошон белдерә; ҡат. *Ул [Зәлифә] әллә нисәмә ҡабат төрлөк тотолған ҡыҙыл сатин күлдәген кейгән.* Һ. Дәүләтшина.

**3.** *диал.* Эргә, ян. *Атым юртаҡ тип әйтерһең, ҡабатымдан юртып уҙ* (Халыҡ йырынан).

**ҠАБАТ** [2] *р.* Икенсегә, яңынан, тағы. *Ҡабат йыуыу. Ҡабат килеү. Ҡабат һөйләү.* ■ *Ҡыҙыл гәскәр актарҙы ҡыуып киткән. Яҡты тормош ҡабат ҡайтҡан.* Ә. Вахитов. *Йәше кипмәй, ҡабат көлә башлай.* Ғ. Сәләм *[Тимер] конвертты йәбештергәс, ҡабат асты.* Б. Бикбай. *Шул китеүҙән*

*тыуып үҫкән яҡҡа ҡабат ҡайтырға тура килмәне.* М. Тажи.

**ҠАБАТ-ҠАБАТ** *р.* Бер нисә мәртәбә; ҡат-ҡат. *Ҡабат-ҡабат әйтеү. Ҡабат-ҡабат яҙыу.*

**ҠАБАТЛАНДЫҠ** *и. мат.* Ике һанды бер-береһенә ҡабатлағандан сыҡҡан һөҙөмтә. *Ҡабатланыусыларҙың урындарын алмаштырыуҙан ҡабатландыҡ үҙгәрмәй.*

**ҠАБАТЛАНМА** *и. һөйл.* Кире ҡабатлана торған тиф.

**ҠАБАТЛАНЫУ** *ҡ.* **1.** *төш. ҡар.* **ҡабатлау.** *Ҡабатланған тәжрибә.*

**2.** *ҡайт. ҡар.* **ҡабатлау.** *Ҡабатланмаҫ йырым, һүнмәҫ йондоҙом, тыңла мине, һорайым, йом күҙең.* Ғ. Хәйри.

**ҠАБАТЛАНЫУСЫ** *и. мат.* Икенсе бер һанға ҡабатланған һан.

**ҠАБАТЛАУ** *ҡ.* **1.** Икенсе тапҡырға башҡарыу, тәкрарлау. *Ҡабатлап эшләү. Ҡабатлап әйтеү. Хатаны ҡабатлау. Үтенесте ҡабатлау.* ■ *[Индрил:] Егеттәр, бынан һуң ундай эште ҡабатларға ярамай.* Д. Юлтый. *Малай башҡа бер һүҙ ҙә әйтә алмай, бер үк һүҙҙе ҡабатлаған да торған* (Әкиәттән). / Икенсе берәү артынан ҡабат башҡарыу. *Кеше һүҙен ҡабатлау.* ■ *Башҡорт егете Миңлегәле Ғөбәйҙуллин Александр Матросов батырлығын ҡабатланы.* Ғ. Ғүмәр. *Ҡаршылағы күгәреп ятҡан текә тау Айбулаттың көйөн дә, һүҙен дә яңғырап ҡабатлай һ.* Дәүләтшина.

**2.** Хәтерҙә нығытыу өсөн яңынан уҡыу. *Дәресте ҡабатлау. Үткәнде ҡабатлау. Шиғырҙы күңелдән ҡабатлау.*

**3.** *мат.* Бер һанды икенсе бер һанға арттырыу; бер үк һанды бер нисә тапҡыр алып, барыһын бергә ҡушыу. *Икене икегә ҡабатлау. Дүртте өскә ҡабатлау. Ҡабатлау ғәмәле.* **Ҡабатлау таблицаһы (*йәки* йәҙүәле)** һандарҙы бер-береһенә бер-бер арттырып, һәр береһенең һөҙөмтәһен күрһәткән теҙмә.

**ҠАБАТЛАУСЫ** *и. мат.* Билдәле бер һанды нисә тапҡырға арттырырға кәрәклеген күрһәткән һан. *Өҫтәмә ҡабатлаусы.*

**ҠАБАТТАН** *р. ҡар.* **ҡабат**[2]. *Һәр минут үтә ҡабаттан әйләнеп килмәҫ өсөн.* С. Кулибай.

**ҠАБАЯҠ** *и. диал.* Ҡаба[1] төбө.

**ҠАБЗИӘТ** [*ғәр.*] *и. иҫк. кит.* Ҡурҡыу, ҡаушау тойғоһо. *Аҡмулла шиғырҙарын моңло тауышы берлә, бер ҡәҙәр ҡабзиәт вә ғәйрәт берлә һөйләне вә яҡшы ғына тәьҫир бирҙе.* Р. Фәхретдинов.

**ҠАБИЛ** [*ғәр.*] *с. иҫк.* Ҡабул итеүсе.

**ҠАБИЛИӘТ** [*ғәр.*] *и. иҫк.* Булдыҡлыҡ, һәләтлек. *Һеҙҙә бар истиғдад һәм ҡабилиәт, уҡыуға, уҡытыуға ҡылығыҙ ғәҙәт.* С. Яҡшығолов.

**ҠАБИЛИӘТЛЕ** *иҫк. с.* Булдыҡлы, һәләтле. *Ҡабилиәтле кеше.*

**ҠАБРА** *с. ҡар.* **ҡабрый.**

**ҠАБРЫЙ** *с.* **1.** Бер яҡ ситкә ҡарай ауыш; ҡабра, ҡырын. *Ҡабрый ер. Ҡабрый юл.* ■ *Юлдың ҡабрый ерендә һаҡланыбыраҡ бар.* М. Ҡулаев.

**2.** *р. мәғ.* Бер яҡ ситкә табан; ҡырын. *Ҡабрый әйләнеп тороу.* ■ *Минең өҫкә килгән ҡуян ҡабрый ялтанып сыҡты ла сапты.* Ф. Иҫәнғолов.

**ҠАБУЛ** [*ғәр.*]: **ҡабул булыу** ғәмәлгә ашыу, үтәлеү. *Минең атай шунда иген иҡте, ғүмере буйы ҡарыны туйманы. Намаҙ уҡып, бәхет теләһә лә, теләктәре ҡабул булманы.* Б. Ишемғол. **Ҡабул итеү** 1) тәҡдим иткәндә үҙ ҡулыңа, үҙ шәхесеңә күсереү. *Бөгөн мин армия өсөн көтөү-көтөү малды ҡарап ҡабул итергә .. тейешмен.* Д. Юлтый. *Үҙ кошоңдоң ҡауырһынын ҡабул итеп алсы, һылыу.* «Алпамыша»; 2) үҙ ҡарамағыңа, үҙ яуаплылығыңа күсереү. *Ҡарауылды ҡабул итеү. Эште ҡабул итеү;* 3) ниндәйҙер ойошма, уҡыу йорто һ. б. нәмә сафына алыу. *Партияға ҡабул итеү. Уҡыуға ҡабул итеү;* 4) рәсми рәүештә танышыу, һөйләшеү өсөн үҙенә индереү йәки саҡырыу. *Ҡабул итеү көнө.* ■ *Ул [Дауытов] Өлкә комитетында ҡабул иткән икенсе секретарға шул турала әйтеп ҡараны.* Б. Бикбай; 5) яныңа, өйөңә индереү. *Иптәшеңде ҡабул итеү. Ҡунаҡ ҡабул итеү;* 6) тормошҡа, ғәмәлгә индереү. *Ҡарар ҡабул итеү. Метр системаһын ҡабул итеү.* ■ *Яңылыҡ булғас, һис шикһеҙ, уны ҡабул итергә кәрәк.* С. Агиш; 7) үтәлешкә, ғәмәлгә алыу. *Кәңәште ҡабул итеү.* ■ *Я, мөжиб,.. Мөхәммәт ғәлиәссәләмгә доға ҡылмаҡҡа бойорҙоң, ҡабул иттек һәм фараз белдек.* М. Өмөтбаев; 8) үҙ исемеңә алып, ыңғай мөнәсәбәт белдереү. *Сәләмде ҡабул итеү.* ■ *Өйрәнсек батшаның бөтә хөрмәтен, ихтирамын ҙур ихласлыҡ һәм түбәнселек менән ҡабул иткән.* З. Биишева; 9) хуп күреп, ғәмәлгә атҡарыу. *Һорар булһаң, теләгеңде ҡабул итәм, мин дә инде ҡунәмен әйткәнеңә.* «Бабсаҡ менән Күсәк». **Ҡабул күреү** ризалыҡ белдереү, хуп күреү. *[Директор:] Эй, ҡыҙҙар, минең уланды ҡабул күрегеҙ. Баш-аяғы менән һеҙгә ҡалдырам.* Ә. Вахитов.

**ҠАБУЛЛАУ** *ҡ. иҫк.* Ҡабул итеү (1, 7—9 мәғ.) (*ҡар.* **ҡабул**). *Ал ҡабуллап, ал да һал шатлыҡҡа сумған күңеләңә тәбригемдең эҫеһен һәм эҫе ялҡын төҫлөһөн.* Ш. Бабич.

**ҠАБУЛЛЫҠ** *и.* Ҡабул булған хәл. *[Наташа:] Түккән күҙ йәштәрем, һораған теләктәрем барыһы ла алла ҡаршында ҡабуллыҡҡа ашһын ине.* Д. Юлтый.

**ҠАБЫҒЫУ** (ҡабыҡ≠) *ҡ.* **1.** Оҙаҡ баҫырылып ятҡанлыҡтан бәҫәреү. *Ҡабыҡҡан бесән.* ■ *[Кинйәбай:] — Ҡабыҡҡан тауарҙы арзан хаҡҡа алып, бында килтереп биш хаҡына һата [Шәгәли].* С. Мифтахов.

**2.** Ҡабыҡланып ҡатыу. *Эшләп, өҫ-баштарым тирғә ҡабыҡты.* Т. Хәйбуллин.

**ҠАБЫҘҘЫРЫУ** *ҡ. йөкм. ҡар.* **ҡабыҙыу.**

**ҠАБЫҘЫУ** *ҡ.* **1.** *ҡар.* **тоҡандырыу.** *Ут ҡабыҙыу. Шәм ҡабыҙыу.*

**2.** *ҡусм.* Хис-тойғо уятыу. *Һине ҡабыҙырға теләп, ҡупме уттарҙа яндым. Ә һин һаман шул бер көйө — һалҡын боҙ булып ҡалдың.* «Совет Башҡортостаны», 1986, 2 март.

**ҠАБЫҠ** *и.* **1.** Төрлө нәмәнең тыштан ҡаплап торған көбө. *Ағас ҡабығы. Алма ҡабығы. Йомортҡа ҡабығы. Көнбағыш ҡабығы. Картуф ҡабығы. Сәтләүек ҡабығы. Һуған ҡабығы.* ■ *Аҡ үҫаҡҡайҙарҙың ай ҡабығы аҡ ҡуянҡайҙарҙың аҙығы* (Халыҡ йырынан).

**2.** Йыуан йүкә йәки ҡарама ағасынан ҡуптарып, таҡта һымаҡ тигеҙләп баҫырылған ҡайыр. *Аҡ ҡабыҡ. Ҡара ҡабыҡ. Һалабаш ҡабығы. Ҡабыҡ төшөрөү.* // *Ҡабыҡ арба. Ҡабыҡ алап.*

*Ҡабыҡ ҡыуыш.* ■ *[Сәмиғулла:] Бер ыңғай өйөнөң башын да йүнәтеп япһаҡ был ҡарттың, шәп булыр ине, әҙерәк ҡабыҡ булғанда.* Ж. Кейекбаев.

♦ **Ер ҡабығы** *кар.* **ер 1. Ҡабыҡ ҡанат** маҡтансыҡ. **Ҡабыҡ ҡуңыҙы** *кар.* **ҡуңыҙ. Ҡандала ҡабыҡ** *диал.* бүртмәс-бүртмәс итеп сиккән биҙәк. *Хәлле кешеләр ҡыҙҙары өсөн ҙур-ҙур ҡандала ҡабыҡлы шаршауҙар, сәкәнле өҫтәл япмалары әҙерләтәләр.* Ғ. Хәйри. **Ҡабыҡ ҡуптарғыс** уйын исеме (түңәрәкләнеп ултыралар; түңәрәк тышынан бер кеше уратып йөрөй ҙә, берәүҙең артына һиҙҙермәй генә бер нәмә һалып китә; һиҙеп ҡалһа, был тегене ҡыуа, һиҙмәй тик ултырһа, бының арҡаһына һуғалар).

**ҠАБЫҠЛАНЫУ** *ҡ.* Ҡабыҡ (1 мәғ.) менән ҡапланыу. *Ҡабыҡланып, картуфка тәм инеү.*

**ҠАБЫҠЛАТЫУ** *ҡ.* Ҡабыҡ (2 мәғ.) ҡуйҙырыу. *Арбаны ҡабыҡлатыу.*

**ҠАБЫҠЛАУ** *ҡ.* Ҡабыҡ ҡуйыу, ҡабыҡлы итеү. *Арбаны ҡабыҡлау. Сананы ҡабыҡлау.*

**ҠАБЫҠҺЫУ** *ҡ. кар.* **ҡабығыу.**

**ҠАБЫМ** *и.* **1.** Бер ҡабып ебәрерлек киҫәк. *Бер ҡабым икмәк.* ■ *Янһары өйөнә ҡайтып етә. Ҡараңғы төшкән. Тамағына ашар ине — бер ҡабым аҙығы юҡ* (Әкиәттән).

**2.** *күсм.* Әҙ генә аҙыҡ, ризыҡ. *[Әбей — Ирғәлигә:] Әсәң бахыр менән бер туғандар кеүек көн иттек. Ҡабымдан ҡалдырышмай, бер ҡалаҡтан ашап, бер ҡалаҡтан эстек.* Һ. Дәүләтшина.

**ҠАБЫНЫУ** *ҡ.* **1.** *кар.* **тоҡаныу.** *Ут ҡабына.*

**2.** *күсм.* Ҡапыл ярһыу, ҡыҙыу. *Ул минең һүңгы һүҙгә ҡапыл ҡабынып китте.* Д. Юлтый.

**ҠАБЫРҒА** *и.* **1.** Умыртҡа һөйәгенән күкрәккә табан дуғаланып килгән тар ялпаҡ һөйәк. *Ҡабырға һөйәге. Ҡабырғаһы һынған.* **Ҡулан ҡабырға** *кар.* **ҡулан.** / Тәндең арҡа менән түш араһындағы тышҡы өлөшө. *Уң ҡабырға. Һул ҡабырға. Ҡабырғаға төртөү.* ■ *Утҡа яҡыныраҡ ятҡан кешеләр, төш аралаш ниҙер һөйләнеп, .. икенсе яҡ ҡабырғаларына әйләнеп ятты.* Я. Хамматов. **БыҒын (йәки һебә) ҡабырғаһы** бил тәңгәлендәге ҡыҫҡа ҡабырға. *[Һырға туйында] ҡыҙҙың атаһы муйын һөйәген алмай, һебә ҡабырғаһы алырға тырыша.* М. Буранғолов.

**2.** Нимәнеңдер ҡыр яғы, яны. *Тау ҡабырғаһы.* ■ *Ҡабырғаһына тулҡын бәргән һайын кәмә ауып китә яҙа.* З. Биишева. *Төлкөбай уң яҡтан үтеп, дошманды ҡабырғанан барып баҫты, ти* (Әкиәттән).

♦ **Ҡабырғаны һанау** ҡул менән һуғыу, туҡмау. *Минең иҫәп, Мәхмут менән икәүләп килеп, Әғләмдең ҡабырғаһын һанау ине.* Ғ. Байбурин.

**ҠАБЫРҒАЛАУ** *ҡ.* Берәй нәмәнең ситенән, ҡабырғаһынан хәрәкәт итеү; эргәләү. *Тау ҡабырғалап барыу. Ҡабырғалап китеү.* ■ *Бер яҡ ҡабырғалабыраҡ бының алдына сыҡтым. Бүре яланға боролорға мәжбүр булды.* С. Кулибай.

**ҠАБЫРҒАЛАШ** *с. һөйл.* Икәү-ара яҡын; яндаш, эргәләш. *Ҡабырғалаш өйҙәр. // Ҡабырғалаш ултырыу.*

**ҠАБЫРҒАЛЫҠ** *и. диал. кар.* **бауырлыҡ** 1.

**ҠАБЫРСАҠ** *с.* **1.** Төрлө әкәм-төкәмдең ҡаты ҡабығы. *Йылға ҡабырсағы. Ҡул ҡабырсағы.* ■ *Эй ҡабырсағынан Оло Устикиндағы фабрика һиҙәп эшләп сығара.* М. Хисмәтов. **Айыу ҡабырсағы** түңәрәгерәк, лапашыраҡ, йоҡа ғына эре ҡабырсаҡ.

**2.** Ике яҡҡа асылмалы таш ҡабыҡлы әкәмтөкәм.

**ҠАБЫРСАҠЛАНЫУ** *ҡ.* Кибеп ҡатып ярылыу. *[Раузаның] аяҡтары, тауыҡ тәпейе кеүек, ҡабырсаҡланып бөткән.* Ҡ. Ибәтуллин.

**ҠАБЫУ** [1] *ҡ.* **1.** Ауыҙға алыу. *Икмәк ҡабыу. Тәмәке ҡабыу. Ҡабып йотоу. Өрөп ҡабыу. Тешләп ҡабыу.* ■ *Батша ҡыҙы балдаҡты ебәк еп менән бәйләгән дә, ауыҙына ҡабып йоҡлаған, ти* (Әкиәттән). / *диал.* Тешләү.

**2.** Ҡармаҡҡа эләгеү, тотолоу. *Боғаҙаккай күлгә ҡармаҡ һалдым, ҡармағыма сабаҡ ҡапманы* (Халыҡ йырынан). / Ау ҡоралына эләгеү. *Тоҙаҡҡа ҡабыу.* / *күсм.* Ҡулға эләгеү; тотолоу. *[Айыуғолаҡ — бабайға:] Ҡаптыңмы? Барыбер ҡасып ҡотола алмаҫһың!* (Әкиәттән).

**3.** Бармаҡ тейҙергәндә шыумай эләгеп, ҡырҡып барыу (үткер ҡоралдың йөҙөнә ҡарата). *Бәке үткерләнгән, ҡабып тора.*

♦ **Ауыҙға йөҙөк ҡабыу** *кар.* **ауыҙ.**

● *Ҡорған ҡапҡан, үҙе килеп ҡапҡан.* Мәҡәл.

**ҠАБЫУ** [2] *ҡ.* **1.** Килеп төшөп яңа башлау (утҡа ҡарата). *Ут йортҡа ҡапты.*

**2.** Тәьҫир итеп ауырттырыу (башты); тейеү. *Башҡа эҫе ҡабыу. Еҫ ҡабыу. Эҫе ҡабыу.*

♦ **Итәккә ут ҡапҡандай** бик ныҡ ашыҡҡанда әйтелә.

**ҠАБЫУ** [3] *ҡ. диал. кар.* **күбеү** [2].

**ҠАБЫШАУ** *ҡ. диал. кар.* **төләү** 2.

**ҠАҒАЙЫУ** *ҡ.* Ҡаҡҡа [1] (4 мәғ.) ҡалыу, ҡаҡҡа әйләнеү. *[Урал — Шүлгәнгә:] Тәнең һыҙлап ҡағайһын.* «Урал батыр».

**ҠАҒАН** *и. тар.* Урта быуаттарҙа төрки халыҡтарының хөкүмәт башлығы титулы һәм шул титулды йөрөткән кеше.

**ҠАҒАНАТ** *и. кар.* **ҡағанлыҡ.**

**ҠАҒАНЛЫҠ** *и. тар.* Ҡаған етәкселек иткән дәүләт.

**ҠАҒИҘӘ** [*ғәр.*] *и.* **1.** Төрлө күренеш, төрлө хәл араһындағы законлылыҡты һәм уларҙың үҙ-ара мөнәсәбәттәрен сағылдыра торған төп фекер. *Грамматик ҡағиҙәләр. Алгебра ҡағиҙәләре.*

**2.** Эштә һәм тормош-көнкүрештә кеше-ара мөнәсәбәтте йәки дөйөм тәртипте билдәләгән күрһәтмә, ҡанун. *Гигиена ҡағиҙәләре. Эске тәртип ҡағиҙәләре. Зоотехника ҡағиҙәләре.*

**ҠАҒЫҘ** [*ғәр.*] *и.* **1.** Яҙыу, китап баҫыу һ. б. өсөн ҡулланылған, ағас, сепрәк, һалам кеүек нәмәләрҙән йоҡа итеп йәйеп яһаған материал. *Аҡ ҡағыҙ. Йоҡа ҡағыҙ. Йомшаҡ ҡағыҙ. Йылтыр ҡағыҙ. Киптергес ҡағыҙ. Бер бит ҡағыҙ. Бер табаҡ ҡағыҙ. Дәфтәр ҡағыҙы. Газета ҡағыҙы. Тәмәке ҡағыҙы. Яҙыу ҡағыҙы. Ҡағыҙға төрөү. // Ҡағыҙ ҡапсыҡ. Ҡағыҙ салфетка.* ■ *Аҡ ҡағыҙға ҡара ҡәләм, ултырып хаттар яҙам* (Халыҡ йырынан).

**2.** Һәр төрлө яҙылған яҙыу. *Кәрәкле ҡағыҙ. Ҡағыҙ ҡарау.* ■ *Бөтә кеше ҡағыҙға үрелде, мин дә уҡыным.* С. Агиш. / Һәр төрлө рәсми яҙыу; документ. *Саҡырыу ҡағыҙы. Ышаныс ҡағыҙы. Эш ҡағыҙы. Ҡағыҙ биреү. Ҡағыҙға ҡул*

*ҡуйыу. Ҡулға ҡағыҙ алыу.* ■ *Ғүмәр ауылын халыҡ телендә Һалҡынбулаҡ тиҙәр, ҡағыҙҙа ғына Ғүмәр тип яҙалар.* Ж. Кейекбаев.

◆ **Аҡ ҡағыҙ кеүек булыу** төҫ ҡасып, бик ныҡ ағарыу. **Ҡағыҙ аҡса** хөкүмәт тарафынан сығарылып, ил эсендә тауар әйләнешендә мәжбүри булған һәм алтынға алмаштырылмай торған, ҡағыҙға төшөрөлгән аҡса билдәһе. **Ҡағыҙ ҡылыу** *иҫк.* ҡағыҙға яҙыу. *Бәйет яҙып, мин гәрип ҡағыҙ ҡылам* (Бәйеттән). **Ҡара ҡағыҙ** һуғышта вафат булғанды белдергән яҙыу. **Маҡтау ҡағыҙы** кешенең яҡшы эшен билдәләп бирелгән рәсми яҙыу. **Талаҡ ҡағыҙы** айырылышыуҙы белдергән рәсми яҙыу. *Мулла .. Салихаға талаҡ ҡағыҙы бирҙе.* Д. Юлтый.

**ҠАҒЫҘЛАШТЫРЫЛЫУ** *ҡ. төш. ҡар.* **ҡағыҙлаштырыу.** *Әхмәҙи [япон һуғышынан ҡайтҡанса] .. атаһы Сәлмән бай күптән вафат ине. Мираҫ бүленеп бөтөп, Сафа мулла ҡулы менән ҡағыҙлаштырылған ине.* Ж. Кейекбаев.

**ҠАҒЫҘЛАШТЫРЫУ** *ҡ.* Ҡағыҙға теркәп законлаштырыу; документлаштырыу. *Йөкләмәне ҡағыҙлаштырыу.*

**ҠАҒЫЛ** *с.* Ҡар йоҡа ятҡан, ҡалҡыуыраҡ (урынға, ергә ҡарата). *Малды ҡағыл ергә сығарырға кәрәк, бесәнгә еңеллек килер.*

**ҠАҒЫЛДЫ** *и. һөйл.* Һыуыҡ тейгәндән килгән ҡыуыҡ сире. *Ҡағылды булыу.*

**ҠАҒЫЛДЫРЫУ** *ҡ.* Килтереп һуғылдырыу; бәрелдереү. *Кәләмемә күңел енен ҡағылдырған .. ике нәмә: әүүәл — алла, икенсе ҡыҙ.* Ш. Бабич.

**ҠАҒЫЛЙЫУ** *ҡ.* **1.** Ныҡ бәрелеп, кире ырғыу; ҡаҡлығыу. *Туп ҡағылйый.*

**2.** *диал.* Ҡалғыу. *Ул .. йоҡонан ҡапыл ғына арына алмай, бер аҙ ваҡыт ҡағылйып ултырҙы.* С. Ҡулибай.

**ҠАҒЫЛМА** [1] *и.* Юлдың йәки йылғаның бөгөлөндәге алып барып һуға торған ер. *Сана ҡағылмала ауып китте.*

**ҠАҒЫЛМА** [2] *и. диал.* Ҡаҡлан. *Ҡағылмала бесән тиҙ кибә.*

**ҠАҒЫЛТЫУ** *ҡ. диал.* Ҡыйырһытыу.

**ҠАҒЫЛЫП-ҺУҒЫЛЫУ** *ҡ. төш. ҡар.* **ҡағып-һуғыу.** *Ҡағылып-һуғылып йөрөү. Машинала ҡағылып-һуғылып барыу.*

**ҠАҒЫЛЫУ** *ҡ.* **1.** *төш. ҡар.* **ҡағыу** [1] 1—3, 5, 6—8. *Беҙ һуғышҡа ингән саҡта барабандар ҡағыла* (Бәйеттән). *[Сажиҙә:] Мин үгәй әсәй ҡулында ҡағылып үҫкән ҡыҙ.* Х. Ибраһимов.

**2.** Килеп һуғылыу; бәрелеү. *[Гөлйөҙөм] боролоп ишеккә барып ҡағылды, ул тыштан бикле ине.* Һ. Дәүләтшина. *Ашыға ла тулҡын, ашыға, ярға бер ҡағылып тымырға.* М. Уразаев.

**3.** Кемгә йәки нәмәгә еңелсә генә бәрелеү, тейеү, ороноу. *Шул уйҙарҙа килә ине Сәйҙел,.. кемдер уға ҡағылып китте татлы хыялдарын бүлдереп.* Ғ. Сәләм. / *күсм.* Нимәнеңдер тәьҫире шауҡымы тейеү. *Уларға һуғыш еле ҡағылғаны юҡ.* Д. Юлтый. *[Сәгиҙә:] Ошондай хәлдең һеҙгә лә шауҡымы ҡағылмаһын тип ҡурҡам.* М. Тажи.

**4.** Кемгә йәки нәмәгә ҡул менән тотоноу; тейеү, ороноу. *Был дәфтәр һеҙгә иҫтәлек булыр. Хәҙергә уҡымағыҙ. Беҙҙән киткәс, юлда ғына уҡырһығыҙ,— тине. Әлбиттә, мин дәфтәргә ҡағылманым.* Д. Юлтый. *Ғәли ашҡа ла, сәйгә лә ҡағылманы.* З. Ғәлимов. / *күсм.* Нимәнелер үҙеңдеке итергә тырышып алыу, үҙләштереү. *Айбулаттар һаман ялсы. Шулай ҙа ул бик тоғро, һинең энәңә лә ҡағылмай.* Һ. Дәүләтшина. / *күсм.* Кешене нимәләлер ҡыҫып, сикләп, уға зыян килтереү. *Кеше хоҡуғына ҡағылыу.* ■ *Ҡағылһалар халҡым иркенә, ҡыҙғанмамын булһа мең йәнем.* Т. Йәнәби.

**5.** *күсм.* Мөнәсәбәтле, бәйләнешле булыу. *Эш тәртибенә ҡағылған мәсьәлә.* ■ *Уның һүҙҙәре миңә генә түгел, һиңә лә ҡағыла.* Х. Зарипов. / Һүҙ ыңғайында нимә тураһындалыр әйтеп үтеү. *Ораторҙар традиция мәсьәләһенә бөтөнләй ҡағылманы.* С. Агиш. / Кире, насар яғын әйтеп, кемделер битәрләү, әрләү. *Карттар уға [Рафикка] бик ҡаты ҡағылдылар.* А. Игебаев. / Юл ыңғайында туҡтап китеү; инеп сығыу; һуғылыу. *Ярцев менән Назарғолов ошо ыңғайҙа башҡа бригадаларға ла ҡағылып ҡайтырға булды.* К. Мәргән.

◆ **Ел ҡағылыу** *ҡар.* **ел. Ен ҡағылыу** *ҡар.* **ен** [1]. **Зәхмәт ҡағылыу** *ҡар.* **зәхмәт. Сырхау ҡағылыу** *ҡар.* **сырхау** [2] 1.

**ҠАҒЫЛЫШ** *и.* Нимәгәлер булған мөнәсәбәт, ҡатнаш, бәйләнеш. *Ҡағылышы булыу. Культураға ҡағылышыбыҙ бар. Эшкә ҡағылышы юҡ.*

**ҠАҒЫЛЫШЛЫ** *с.* Ҡайһылыр йәһәттән мөнәсәбәтле, ҡатнашлы, бәйләнешле. *Ул [Салауат ҡылысы] Латвия ССР-ы Тарих музейының яңы кенәгәһенә 39497-се номер менән теркәлгән икән. Әммә нисек алыныуына, мемориаль ҡиммәтенә ҡағылышлы мәғлүмәттәр төпсөрләп яҙылмаған.* «Совет Башҡортостаны», 1986, 3 июль.

**ҠАҒЫН** *и. диал. ҡар.* **ҡағылма** [1].

**ҠАҒЫНДЫ** [1] *и.* **1.** Берәй нәмәне ҡаҡҡанда, ҡуҙғатҡанда төшкән сүп.

**2.** *диал.* Талҡыш.

**ҠАҒЫНДЫ** [2] *и.* Ҡыйырһытылған, ситләтелгән хәл; ҡаҡҡы [2]. *Кеше ҡағындыһында булыу.*

**ҠАҒЫНЫУ** *ҡ.* **1.** Кейем-һалымды сүп, саңдан ҡаҡҡылап таҙартыу. *Ҡағынып, ваҡ ҡар бөртөктәрен сәсрәтеп, бер ҡыҙ килеп инде.* Һ. Дәүләтшина.

**2.** Ҡанаттарҙы елпетеү. *Сакыра ла кәкүк, һайрай былбыл, талдар араһында ҡағынып* (Халыҡ йырынан). / *күсм.* Йөрәкһеп талпыныу; елкенеү. *Белəм,.. дүрт күҙ менән мине көткәнең, фронттарға ҡарап ҡағынғаның, ҡауышыу көнөн өмөт иткәнең.* Ғ. Амантай.

**ҠАҒЫП-ҺУҒЫУ** *ҡ.* **1.** Төрлө яҡҡа алып һуғыу. *Нескә билкәй, һине ҡағып-һуғып йөрөтмәксе була тулҡындар.* А. Игебаев.

**2.** Һуҡҡылап, ҡаҡҡылап, саңдан һ. б. таҙартыу. *Командир беҙгә өҫ-башты ҡағып-һуғып кейергә ҡушты.* М. Тажи.

**3.** Тынғы бирмәй гел һуҡҡылау; туҡмау. *[Килтәй:] Усаҡтағы утты һүндермә, бесәйҙе ҡаҡмаһуҡма, өй түбәһенә менеп йөрөмә* (Әкиәттән).

**ҠАҒЫТ** *и. диал. ҡар.* **ҡаҡ** [2].

**ҠАҒЫТЫУ** *ҡ.* Үҙ итмәй ситләтеү; ҡыйырһытыу. *[Носрат:] Минең күңел киң. Бер балам янына уның да балалары һыйыр, ҡағытмам.* Й. Солтанов.

**ҠАҒЫУ** [1] (ҡаҡ*ғ*) *ҡ.* **1.** Осло бер нәмәне һуғып,

бәреп индереү; ҡатыу. *Ҡаҙыҡ ҡағыу. Сөй ҡағыу. Сүкеш менән ҡағыу.* / Ҡаҙаҡлап беркетеү, ныҒытыу. *Таҡта ҡағыу.* ■ *Коридорҙа кейем элгестәре ҡағып торған Тайморзин ҡулындағы сүкешен иҙәнгә ырғытты.* М. Тажи.

**2.** Кире һуғыу, ҡайтара һуғыу. *Малай тупты ҡағып ебәрә* (Әкиәттән). / *күсм.* Үҙ итмәй рәнйетеү; ҡыйырһытыу. *Минән дә генә ҡалған ир баланы аталары юҡ тип ҡаҡмағыҙ* (Халыҡ йырынан).

**3.** Бәрә һуғыу, килтереп һуғыу. *Ишкәк менән көмөш һыуға ҡағып, һалсы килә баҫып аяҡҡа.* С. Ҡудаш.

**4.** Һуҡҡылау, шаҡылдатыу. *Ҡапҡа ҡағыу.* ■ *Ишек ҡағам. Бер ни тиклем көттөрөп, ишек асыла.* Ғ. Хәйри. *Бабай ошо өйгә килгән дә, тәҙрә ҡаҡҡан* (Әкиәттән). / Даңғылдатып һуғыу, бәргеләү. *Барабан ҡағыу. Тимер ҡағыу.* ■ *Һәр өйҙә уйын-көлкө, думбыра ҡағып, үлән әйтеү ишетелә.* Ғ. Ғүмәр. / Ҡабат-ҡабат һуғылыу, бәрелеү (тулҡын тураһында). *Иҙелдә тулҡын бәүеләп ярҙарҙы ҡаға.* М. Кәрим. *Йылғалар ярҙарға ҡағып, терегөмөштәй аға.* Р. Ниғмәти. / Йылы хистойғо белдереп, йомшаҡ ҡына һуҡҡылау, һөйөү. *Яурындан ҡағып яратыу.* ■ *Арыҫландай батырҙарҙың арҡаһынан ҡағығыҙ* (Халыҡ йырынан).

**5.** Күтәреп-күтәреп һелккеләү, һуҡҡылау. *Бесәнде ҡағыу. Мендәрҙе ҡағып күпертеү.* ■ *Бала-сағаға тиклем ҡалмаған, тырма тотҡан булып һалам ҡағалар.* Б. Бикбай.

**6.** Һелккеләп, һуҡҡылап, саң, бысраҡтан таҙартыу. *Өҫ-башты ҡағыу. Балаҫ ҡағыу.* ■ *Ғәрифә үҙе .. он саңы туҙҙырып тоҡ ҡаға.* Ф. Иҫәнғолов.

**7.** Ҡуҙғалып китһен йәки йөрөшөн тиҙләтһен өсөн, аттың дилбегәһен еңелсә һелккеләү. *Ат, дилбегә ҡаҡҡанды ла көтмәй, баш ташлап юрта.* С. Агиш.

**8.** Елпеү хәрәкәте яһау (ҡоштар ҡанаты тураһында). *Иҙел яры шыңшый .. Урманында төн бөркөтө ҡанат ҡағалыр.* Ғ. Сәләм.

**9.** Өрөп һелкендереү; елпетеү. *Япраҡ ҡағырлыҡ та ел юҡ.* Д. Юлтый.

**10.** Елпетеп киптереү, елләтеү. *Ел ҡаҡҡан кер.*

◆ **Йөрәк ҡағыу** елкенеү, ярһыу. *Йөрәк ҡағып Аҡбуҙ килә, саба-елә, саба-елә.* М. Кәрим. **Йүкә сөй (*йәки* шына) ҡағыу** юрамал осондороп маҡтау. *Йүкә шына ҡаҡҡандарын белеп торам инде, әммә рәхәт. Маҡтау кемдең генә башын әйләндермәгән.* Р. Низамов. **Керпек ҡағыу** күҙ асып йомоу. *Керпек ҡағырға ла өлгөрмәнек, ҡырмыҫҡалар йыланды һырып алды.* «Совет Башкортостаны», 1970, 7 октябрь. **Керпек [тә] ҡаҡмау** *ҡар.* **керпек. Кире ҡағыу** риза булмай ҡаршы килеү. *Бүләкте кире ҡағыу. Үтенесте кире ҡағыу. Һүҙҙе кире ҡағыу.* ■ *Бәхетемде кире ҡаҡтың һаргайтыр өсөнмө, атаҡайым* (Сеңләүҙән). **Күкрәк ҡағыу** *ҡар.* **күкрәк. Ҡаҡҡан ҡаҙыҡ кеүек** 1) шаҡ ҡатып баҫып ҡалған кешегә ҡарата әйтелә. *Шакир, ҡаҡҡан ҡаҙыҡ кеүек, соланда баҫып ҡалды.* Һ. Дәүләтшина; 2) ныҡ кешегә ҡарата әйтелә. *Ҡаҡҡан ҡаҙыҡ кеүек, ҡуҙғатырмын тимә.* **Ҡолаҡ ҡағыу** *ҡар.* **ҡолаҡ.** *Их, көнләшеп, ҡылтайып, иркәмдән ҡаҡтым ҡолаҡ. Хәҙер ул миңә күктәге ай ҡыҙы һымаҡ йыраҡ.* А. Игебаев. **Серге ҡағыу** *ҡар.* **серге. Тел ҡағыу** *ҡар.* **тел** 2. *[Колхозсы — бригадирға:] Тел ҡаға торған булма Биктимергә. Етәр!* Б. Ишемғол. **Эйәк ҡағыу** *ҡар.* **эйәк.** *Ҡарт тәрән итеп тын алды ла, салҡан йығылып, эйәк ҡаҡты.* Б. Бикбай.

● *Ир ҡаҡҡанды мир ҡағыр.* Мәҡәл. *Ҡапҡаһынан эт баҡмай, төнлөгөнән ел ҡаҡмай.* Мәҡәл. *Түн күрмәгән түн күрһә, ҡаға-ҡаға туҙҙырыр.* Мәҡәл. *Тырышҡан табыр, ташҡа ҡаҙаҡ ҡағыр.* Мәҡәл. *Яңғыҙ батыр яу ҡаҡмаҫ.* Мәҡәл.

**ҠАҒЫУ** [2] *с.* Ҡалҡыуҙағы еләҙ (урынға ҡарата). *Ҡағыу ерҙә ҡурай һырғый булып үҫә.*

**ҠАҒЫУ** [3] *с.* Елле ҡоро (көнгә ҡарата). // *Көн ҡағыуға әйләнде.*

**ҠАҒЫШТЫРЫУ** *к.* Янған утынды ҡағыпһуғып йүнәтеү. *Усаҡты ҡағыштырыу. Ҡаҙан аҫтын ҡағыштырыу.* ■ *Ул [ҡарт] утты ҡағыштырып, сәй йылытырға ҡуйҙы.* Ә. Вахитов.

**ҠАҒЫШЫУ** *к.* **1.** *урт. ярҙамл. ҡар.* **ҡағыу** [1] 1, 5, 6. *Кейем ҡағышыу. Ҡаҙыҡ ҡағышыу. Юрған ҡағышыу.*

**2.** *диал.* Һуғышыу.

**ҠАДИМ** [*ғәр.*] *и.* Юлдағы кеше, юлсы. *Туң тәҙрә арҡыры яткан урындан ай ҡарыйм. Ай, шиғыр бир! Ай, шиғыр бир! — тип, уны даулай ҡадим.* Ш. Бабич.

**ҠАДИР** [*ғәр.*] *с. иҫк. кит.* **1.** Көслө, ҡеүәтле. *Һыҙғанғанмын ҡадир беләктәрҙе изге теләк менән күп эшкә.* Д. Юлтый. / Һәләте булған, һәләтле. *Юҡ итергә һәм дә бар итергә һин ҡадирһың барыһын бер көндә.* Б. Мирзанов.

**2.** (*баш хәреф менән*) Ир-ат исеме.

**ҠАҘ** *и.* **1.** Өйрәктәр ғаиләһенә ҡараған оҙон муйынлы эре һыу ҡошо. *Кейек ҡаҙ. Ата ҡаҙ. Инә ҡаҙ. Бала ҡаҙ. Оло ҡаҙ. Өй ҡаҙы. Ҡыр ҡаҙы. Ҡаҙ бәпкәһе. Ҡаҙ ите. Ҡаҙ йомортҡаһы. Ҡаҙ майы. Ҡаҙ ҡауырһыны. Ҡаҙ мамығы.* ■ *Әбейҙәре тауыҡ, өйрәк, ҡаҙҙарға ем бирә.* Ғ. Дәүләтшин. **Ҡара ҡаҙ** ҡараһыу буҙ төҫтәге ваҡ ҡыр ҡаҙы. **Ҡоба ҡаҙ** ҡуңырыраҡ эре ҡыр ҡаҙы. **Ҡытай ҡаҙы** текә маңлайлы эре өй ҡаҙы. **Туғаҙаҡ ҡаҙ** *ҡар.* **туғаҙаҡ.**

**2.** Шул ҡоштоң ашамлыҡ итеп ҡулланылған ите. *Бешкән ҡаҙ. Ҡаҡлаған ҡаҙ.* ■ *Һимеҙ ҡаҙҙың тәмле еҫтәре Васяның ауыҙ һыуын ҡойҙо.* Һ. Дәүләтшина.

◆ **Ҡаҙ борсағы** *ҡар.* **борсаҡ** [1] 3. **Ҡаҙ өмәһе** *этн.* көҙ көнө күпләп ҡаҙ һуйғанда мамығын йолҡоу өсөн үткәрелгән өмә. *Шаулап ҡаҙ өмәләре үтте, ҡыҙҙар йырлай-йырлай ҡанат осорҙо.* Р. Низамов. **Ҡаҙ юлы** *диал.* Ҡош юлы (*ҡар.* **ҡош**).

**ҠАҘАҠ** [1] *и.* Ҡаҙаҡ ССР-ының төп халҡын тәшкил иткән милләт һәм шул милләттең бер кешеһе (төрки телдәрҙең береһендә һөйләшә). *Ҡаҙаҡ халҡы. Ҡаҙаҡ ҡатыны. Ҡаҙаҡ теле.*

◆ **Ҡаҙаҡ һалмаһы** *ҡар.* **һалма** 1.

**ҠАҘАҠ** [2] *и.* Боронғо ауырлыҡ үлсәү берәмеге (96 мыҫҡалға, хәҙергесә — 409,5 грамға тиң). *Бәҙерниса әбей .. өс-дүрт ҡаҙаҡ май бешеп, ҡар баҙына төшөрҙө.* Р. Низамов.

**ҠАҘАҠ** [3] *и.* **1.** Бик эре тимер сөй. *Ҡаҙаҡ ҡағыу.* ■ *Ҡарт бер уйынсыҡ тәгәрмәсте быраулап тиште лә, бағаналағы ҡаҙаҡҡа элеп ҡуйҙы.* М. Тажи.

2. *диал. кар.* **ҡаҙау** [2].

**ҠАҘАҠЛАНЫУ** *к. төш. кар.* **ҡаҙаҡлау** [1]. *Тәҙрәләр ҡаҙаҡланған.* ■ *Ике балалар карауаты күренә. Стенаға ҡаҙаҡланған кескәй генә шкафта төрлө һауыт-һабалар.* Д. Юлтый.

**ҠАҘАҠЛАТЫУ** *к. йөкм. кар.* **ҡаҙаҡлау** [1]. *Белдереү ҡаҙаҡлатыу. Такта ҡаҙаҡлатыу.*

**ҠАҘАҠЛАУ** [1] *к.* Ҡаҙаҡ [3] ҡағып нығытыу, беркетеү. *Беҙ Әхмәҙулла бабай менән .. бураманың башын ябырға тотондоҡ. Ул ҡаҙаҡлай, мин уға такта алып биреп торам.* Ә. Вахитов.

**ҠАҘАҠЛАУ** [2] *к.* Ҡаҙаҡ [2] менән үлсәү. *Ҡаҙаҡлап һатыу. Ҡаҙаҡлап бүлеү.*

**ҠАҘАҠЛЫ** [1] *с.* Ҡаҙау ҡағып нығытыулы, беркетеүле. *Ҡаҙаҡлы такта.*

**ҠАҘАҠЛЫ** [2] *с.* Ҡаҙаҡ [2] менән үлсәп һатыла торған. *Ҡаҙаҡлы сәй.*

**ҠАҘАҠСА** *р.* **1.** Ҡаҙаҡ телендә. *Ҡаҙаҡса уҡыу. Ҡаҙаҡса һөйләү.*

**2.** Ҡаҙаҡтарға хас, ҡаҙаҡтар кеүек. *Ҡаҙаҡса кейенеү.*

**ҠАҘАЛДЫРЫУ** *к.* Ҡаҙалырға юл ҡуйыу; ҡаҙалтыу. *Бармаҡҡа сүп ҡаҙалдырыу.*

**ҠАҘАЛТЫУ** *к.* Ҡаҙалырға юл ҡуйыу, ҡаҙалырға ирек биреү. *Бармаҡҡа сүп ҡаҙалтыу. Үртҡа һөлөк ҡаҙалтыу.*

**ҠАҘАЛЫУ** *к.* **1.** *төш. кар.* **ҡаҙау** [1]. *Ергә ҡаҙалған таяҡ. Иҙеүгә ҡаҙалған энә.*

**2.** Осло нәмәгә ныҡ итеп төртөлөү; сәнселеү. *[Сынбулатов:] Ана, көтөүҙә тоҡом үгеҙе үлергә ята. Ҡорһағы ярылған. [Зыя:] Ағасҡафәлән ҡаҙалдымы икән ни?* М. Тажи.

**3.** *күсм. әрл.* Юҡҡа сығыу, юҡ булыу. *Ҡаҙалһын донъяһы — күңелгә ҡыҙыҡһыҙ.* Ш. Бабич. *[Мәгүзә:] Ҡайҙа ҡаҙалып бөткәндәр?!* Б. Бикбай.

**4.** Нимәлер тишеп инеү. *Ҡаҙау ҡаҙала. Шырау ҡаҙала. Энә ҡаҙала.* ■ *Был кешенең уғы алыҫтағы бер байҙың өй түбәһенә төшөп ҡаҙалған* (Әкиәттән). / *күсм.* Ныҡ тәьҫир итеп әрнетеү. *Был һүҙ теге бахырҙың йөрәгенә барып ҡаҙалды.* С. Агиш.

**5.** Тәнгә йәбешеү, инеү (бөжәктәргә ҡарата). *Талпан ҡаҙала. Һөлөк ҡаҙала.* ■ *Серәкәйҙәр килеп, «әнем-м-м» тип ҡаҙалып китәләр.* Ғ. Дәүләтшин.

**6.** *күсм.* Ныҡ иғтибар менән күҙ алмай текләп, нимәләр эшләү. *Китапҡа ҡаҙалыу. Ҡаҙалып ҡарау.* ■ *Мәкегә капланырҙай булып, ҡалҡыуыска ҡаҙалып ултырам.* Ф. Иҫәнғолов.

**7.** *күсм. һөйл.* Нимәгәлер ҡомһоҙланып ташланыу, ябырылыу. *Ҡаҙалып ашау.*

**8.** *күсм. һөйл.* Ғәйеп табып ныҡ бәйләнеү. *[Вәлишина:] Бөтәһе лә бер яҡлы булып алған да, миңә ҡаҙала.* «Һәнәк», 1971, № 6.

♦ **Бысаҡ ҡаҙалғыр** ҡарғағанда әйтелә. *Ҡанға тоҙ һалып йөрөйһөң, бысаҡ ҡаҙалғыр.* «Ҡуҙыйкүрпәс менән Маянһылыу». **Йөрәккә ҡаҙалыу** *кар.* **йөрәк 2. Ҡаҙалып киткер** ҡарғағанда әйтелә. **Ҡатыу ҡаҙалыу** *шул уҡ* **эсте ҡатыу алыу** (*кар.* **эс**).

**ҠАҘАН** *и.* **1.** Аҫтына ут яғып, аш-һыу әҙерләй торған йәйенке ауыҙлы, йомро төплө сөм һауыт. *Бәләкәй ҡаҙан. Оло ҡаҙан. Ҡаҙан алды. Ҡаҙан аҫты. Ҡаҙан ҡолағы. Ҡаҙан ҡылысы. Ҡаҙан сите. Ҡаҙан төбө. Бер ҡаҙан аш. Ҡаҙан тултыртыу.* ■ *Ҡаҙан тултырып һалынған ит бешкәнсе, Татлыбикә ҡунаҡтарына сәй эсерә торҙо.* Я. Хамматов. **Ҡаҙан ҡабы** юл йөрөгәндә ҡаҙан һала торған махсус ҡап. **Ҡула ҡаҙан** *кар.* **ҡула** [2]. **Ҡурғы ҡаҙан** *кар.* **ҡурғы** [2]. **Сүлмәк ҡаҙан** бәләкәй сөм ҡаҙан.

**2.** Төрлө маҡсатта һыуҙан пар алыу өсөн хеҙмәт иткән ябыҡ һауыт. *Паровоз ҡаҙаны.*

♦ **Ҡаҙан аҫыу** аш бешерергә ҡуйыу, аш һалыу. *[Әмир:] Айырым ҡаҙан аҫҡансы, бер ҡаҙандан ашарбыҙ.* Х. Ғиләжев. **Ҡаҙан йәймәһе** *кар.* **йәймә** [1]. **Ҡаҙан ҡолағы** эремсек, картуф билмәне. *Ҡаҙан ҡолағы бешереү.* **Ҡаҙан өйө** *диал. кар.* **ҡаҙанлыҡ 1. Ҡаҙан ярыу** балалар уйынында: тейешле сикте боҙоу.

● *Ҡаҙанда ни булһа, сүмескә шул сыға.* Мәҡәл.

**ҠАҘАНДАШ** *и.* Бер ҡаҙандан ашаған яҡын кеше.

**ҠАҘАНЛАП** *р.* Ҡаҙан тултырып. *Ҡаҙанлап ит бешереү.*

**ҠАҘАНЛЫҠ** *и.* **1.** Бүлмәнең усаҡ, ҡаҙан яғы; аш-һыу бүлмәһе. *Әхмәҙулла ҡаҙанлыҡҡа үтешләй ҡатынын семтеп алды.* М. Хәйҙәров.

**2.** *кар.* **аласыҡ 2.**

**ҠАҘАНСЫ** *и. иҫк.* **1.** Ҡаҙан яһаусы.

**2.** Пар ҡаҙаны менән эш иткән кеше.

● *Ҡайҙан ҡолаҡ сығарһа ла ҡаҙансының ирке бар.* Мәҡәл.

**ҠАҘАНЫУ** *к.* Тырышлыҡ, хеҙмәт менән нимәләр яулап алыу. *Абруй ҡаҙаныу. Дан ҡаҙаныу. Исем ҡаҙаныу. Ихтирам ҡаҙаныу. Рәхмәт ҡаҙаныу. Хөрмәт ҡаҙаныу. Уңыш ҡаҙаныу. Ышаныс ҡаҙаныу.* ■ *Фронттарҙа Совет Армияһы көн һайын яңы еңеүҙәр ҡаҙанып алға бара.* Ә. Вәли. *[Көбәк:] Ғүмерем буйы дан артынан ҡыуҙым, малдар йыйҙым, тарханлыҡ ҡаҙандым.* Б. Бикбай.

**ҠАҘАНЫШ** *и.* Яулап алынған уңыш. *Культура ҡаҙанышы. Фән ҡаҙанышы. Ҡаҙанышҡа өлгәшеү. Ҡаҙаныштарға таяныу.* ■ *Социалистик ҡаҙаныштарҙы, совет халҡының тыныс хеҙмәтен, дәүләттең суверенлығын һәм территориаль бөтөнлөгөн һаҡлау маҡсатында СССР-ҙың Ҡораллы көстәре булдырылды һәм дөйөм хәрби хеҙмәт бурысы индерелде.* Башҡорт АССР-ының Конституцияһы, 1984.

**ҠАҘАРМА** [*рус.* ⟨ *итал.*] *и.* Хәрби частар урынлаштырыла торған махсус бина.

**ҠАҘАРЫНЫУ** *к. диал.* Үтенеү, ялбарыу; аҙарыныу.

**ҠАҘАУ** [1] *к.* **1.** Осло, үткер нәмәне төртөп индереү; сәнсеү. *Артына штык ҡаҙай башлаһаң, тиҙ аҡыл инер.* Д. Юлтый. / Сәнсеп ауырттырыу (бөжәк һ. б. ҡарата).

**2.** Нимәнелер батырып ултыртыу, сәнсеп ҡуйыу. *Маяҡ ҡаҙау.* ■ *Ул салғыһын һабы менән ергә ҡаҙап, .. ҡаршы килә башланы.* К. Мәргән. *Егет әнә кеүек кенә булып ҡала. Әбей уны бүрәнә мүгенә ҡаҙап ҡуя* (Әкиәттән).

**3.** Һабы, һабағы һ. б. менән нимәгәлер беркетеү. *Беҙ ҡаҙарбыҙ ал әләмде ныҡ, батыр, йәш ҡул менән.* Ғ. Амантай.

**4.** Осло нәмә менән ҡуша сәнсеп беркетеү.

*Брошка ҡаҙау. Орден ҡаҙау. Түшкә миҙал ҡаҙау.* ■ *Ул фоторәсемдә һынған перо осо менән ҡаҙап ҡуйҙы.* С. Агиш. *Сәскә ҡаҙап бөҙрә сәстәреңә, кис баҡсаға мине саҡырма.* Ғ. Хәйри.

**5.** *диал. ҡар.* **тағыу** 4. *Төймә ҡаҙау.*

◆ **Дарыу ҡаҙау** шприц менән тәнгә дарыу ебәреү.

**ҠАҘАУ** [2] *и.* Ваҡ тимер сөй. *Ваҡ ҡаҙау. Ҡаҙау ҡағыу.* ■ *Килен кейемен сисеп ҡаҙауға элеп ҡуя* (Әкиәттән).

● *Эшһеҙ кеше — башһыҙ ҡаҙау.* Әйтем.

**ҠАҘАУ** [3] *с. диал. ҡар.* **ҡалдау** [1].

**ҠАҘАУЛАНЫУ** *ҡ. төш. ҡар.* **ҡаҙаулау.** *Алты туған .. кем уҙарҙан сабышып китә. Заятүләк аяғы ҡаҙауланған дуңәне менән тороп ҡала.* «Заятүләк менән Һыуһылыу».

**ҠАҘАУЛАТЫУ** *ҡ. йөкм. ҡар.* **ҡаҙаулау.** *Таҡта ҡаҙаулатыу.*

**ҠАҘАУЛАУ** *ҡ.* Ҡаҙау ҡағып нығытыу, беркетеү; ҡаҙаҡлау.

**ҠАҘАУЛЫ** *с.* **1.** Ҡаҙау менән ҡағылған. *Ҡаҙаулы таҡта.*

**2.** Ҡаҙап, сәнсеп ҡуйылған. *[Егет] һарайҙы асып инһә, бер әбей ултыра, ти. Ә иҙәндә ҡаҙаулы уҡ тора, ти* (Әкиәттән).

**ҠАҘАУЫС** *и.* **1.** Йоҡа нәмәне ҡаҙап беркетеү өсөн ҡулланылған ҙур ҡалпаҡлы ҡыҫҡа ҡаҙау.

**2.** Ҡатын-ҡыҙҙың түшкә ҡаҙай торған ҡаптырмалы биҙәүесе.

**ҠАҘАЯҠ** [1] *и. ҡар.* **абаға.** *Унда [урман яғында] малға ярамаған аҫҡырғаҡ, ҡаҙаяҡ үләне ҡуп.* Я. Хамматов.

**ҠАҘАЯҠ** [2] *и. диал.* Ҡаҙғанат, һоҫлан.

**ҠАҘҒАНАТ** [1] *и.* Ҡара-ҡаршы һөйәп, теҙеп ҡуйған көлтә өйөмө; һоҫлан. *Көлтәне ҡаҙғанатҡа ултыртыу.*

**ҠАҘҒАНАТ** [2] *и.* Сиккәндә, ҡорама ҡорағанда өскөлләп төшөрөлгән биҙәк.

**ҠАҘҒАНАТЛАУ** *ҡ.* Ҡаҙғанат биҙәге төшөрөү. *Ҡаҙғанатлап сигеү.*

**ҠАҘҒЫС** *и.* Ҡаҙа торған ҡорал. *Ер ҡаҙғыс. Канау ҡаҙғыс. Картуф ҡаҙғыс.*

**ҠАҘҘЫРЫУ** *ҡ. йөкм. ҡар.* **ҡаҙыу.** *Баҙ ҡаҙҙырыу. Ҡоҙоҡ ҡаҙҙырыу.*

**ҠАҘНА** [1] [*ғәр.*] *и.* **1.** Дәүләттең бөтә булған байлығы; дәүләт милке.

**2.** Шул милеккә эйә булған дәүләт һәм ошо милекте тотонған дәүләт ойошмаһы. *Ныязғолға бының өсөн ҡаҙна ҡуп аҡса түләйҙер әле.* Һ. Дәүләтшина.

**3.** Тупланған аҡса, байлыҡ.

◆ **Әндрәй ҡаҙнаһы** иҫәпһеҙ, бөтмәҫ байлыҡ. *[Хәжәр — Дауытҡа:] Я хоҙа! Ғәфүргә аҡса, квартирға аҡса, һиңә аҡса! Миндә әндрәй ҡаҙнаһы бар тип уйлайһыңмы әллә?* Ш. Янбаев.

**ҠАҘНА** [2] *и.* **1.** Ниҙеңдер ултырған нигеҙе, нигеҙ өлөшө. *Мейес ҡаҙнаһы.* ■ *Ҡарабай урындыҡ ҡаҙнаһында ултырған ҡыҙҙы еп менән сырмап бәйләй* (Әкиәттән).

**2.** Теш ултырған нигеҙ һөйәк. *Тешем ҡойолоп бөттө, ә ҡаҙналар ныҡ. Шул ҡаҙна менән сәйнәп ашайым инде.* Д. Бураҡаев.

**ҠАҘНАСЫ** *и.* Ойошманың, учреждениеның аҡсаһын ҡулында һаҡлап, шуның менән эш иткән кеше.

**ҠАҘЫ** *и.* **1.** Йылҡы малының ҡабырға һәм ҡорһаҡ ите өҫтөнә үргән майы. *Туйға дүрт иле ҡаҙыһы сыҡҡан йылҡы һуйылды.* З. Биишева.

**2.** Шул майҙы тоҙлап, тәмләп, эсәк эсенә тултырып яһаған ашамлыҡ. *Ҡаҡлаған ҡаҙы.* ■ *Һөмһөрҙөң бисәһе .. ҡаҙы бешереп, һалма ҡырҡып, ҡунаҡ көтөп кенә торғанда, Йәмһүр ҡоҙа килгән дә төшкән* (Әкиәттән).

**ҠАҘЫҠ** *и.* Ослап ергә ҡаҡҡан нәҙек бағана. *Имән ҡаҙыҡ. Еле ҡаҙығы. Ситән ҡаҙығы. Ҡаҙыҡ ҡағыу. Ҡаҙыҡ ослау. Ҡаҙыҡҡа бәйләү. Ҡаҙыҡҡа элеү.*

◆ **Баш ҡаҙығы** баш ҡайғыһы, баш бәләһе. **Ҡаҡҡан ҡаҙыҡ кеүек** *ҡар.* **ҡағыу** [1]. **Ҡаҙыҡ теш** *ҡар.* **теш** [1] 1. **Тимер ҡаҙыҡ [йондоҙо]** бәләкәй Етегән йондоҙлоғона ингән, төньяҡ ҡотопҡа иң яҡын торған яҡты йондоҙ.

**ҠАҘЫҠАЙ** *р. ҡар.* **ләл-ләл 1.** *Ҡаҙыҡай баҫыу. Ҡаҙыҡай тороу.*

**ҠАҘЫЛДЫҠ** *и.* Ер аҫтынан табылған мәғдән йәки башҡа нәмә. *Геология — ер ҡабығының төҙөлөшөн, тарихын һәм файҙалы ҡаҙылдыҡтарын өйрәнә торған фән.* Ҡ. Тимерғазин. **Ҡаҙылдыҡ байыҡтыс** ҡаҙылдыҡ байлыҡтарҙы төрлө ысул менән буш ҡом-таштан айыра торған. *Ҡаҙылдыҡ байыҡтыс фабрика.* **Ҡаҙылдыҡ байытыу** ҡаҙылдыҡ байлыҡтарҙы буш ҡом-таштан айырыу.

**ҠАҘЫЛМА** *с.* Ер аҫтынан ҡаҙып алына торған. *Ҡаҙылма минерал.* ■ *Ҡаҙылма байлыҡтарының ҡуплегенә ҡарап, Башҡортостанды Урал хазинаһы тип атайҙар.* Д. Бураҡаев.

**ҠАҘЫЛЫҠ** *и. диал.* Ҡаҙы.

**ҠАҘЫЛЫУ** *ҡ. төш. ҡар.* **ҡаҙыу.** *Ҡаҙылған соҡор.*

**ҠАҘЫНДЫ** *с.* Ҡаҙып сығарылған.

**ҠАҘЫНДЫҠ** *с. ҡар.* **ҡаҙынды.** *Ул [Заятүләк] Балҡан тау башына булат һөңгөһө менән ҡәбер ҡаҙа, ҡаҙындыҡ тупраҡты алтын бүрке менән алып ташлай.* «Заятүләк менән Һыуһылыу».

**ҠАҘЫНЫУ** *ҡ.* **1.** Бер ерҙә соҡсоноп ҡаҙыу. *[Егет] .. сисенеп ташлап, шул урынды ҡаҙа башланы. Башта был ҡаҙыныу уға көлкө лә, мәғәнәһеҙ ҙә тойолдо, дымлы тупраҡ сыға ла сыға.* Б. Бикбай.

**2.** *ҡусм.* Соҡсоноп эҙләү; төпсөнөү. *Тик алтын һүҙ табыр өсөн тейеш һәр кем ҡаҙынырға.* Н. Нәжми.

● *Ҡаҙынған ҡарға ҡар аҫтынан ҡалъя таппаҡан.* Мәҡәл.

**ҠАҘЫТЫУ** *ҡ. диал.* Ҡаҙҙырыу.

**ҠАҘЫУ** *ҡ.* **1.** Ерҙең өҫтөн аҡтарып өҙөү; соҡоу. *Тәрән ҡаҙыу. Һай ҡаҙыу. Ҡаҙып ташлау.* ■ *Буҙ толпар, ерҙе сапсый торғас, тубығына тиклем ҡаҙып төшкән, ти.* «Алпамыша». *Йомран кеүек ер ҡаҙабыҙ, көрәк беҙгә бик кәрәк* (Бәйеттән). / Өңөп, соҡор яһау. *Баҙ ҡаҙыу. Канау ҡаҙыу. Ҡоҙоҡ ҡаҙыу. Ҡәбер ҡаҙыу. Окоп ҡаҙыу.*

**2.** Ерҙән соҡоп алыу, соҡоп сығарыу. *Баҡыр ҡаҙыу. Тимер ҡаҙыу. Сеүәсен ҡаҙыу. Сөгөлдөр ҡаҙыу.* ■ *Алеша .., ҡунәккә дыңғырлатып яңы ғына ҡаҙған картуфты һала.* З. Биишева.

**3.** Тупрағын көрәк менән соҡоп йомшартыу. *Баҡса ҡаҙыу. Түтәл ҡаҙыу.* ■ *Ҡайтһалар, Сәлмән бөтә ерҙе ҡаҙып, ҡул тырмаһы менән*

*тырматып, картуф ултыртырға әҙерләп ҡуйған* (Әкиәттән).

♦ **Соҡор ҡаҙыу** *кар.* **соҡор** [1].

● *Кешегә соҡор ҡаҙма, үҙең төшөрһөң.* Мәҡәл.

**ҠАҘЫШЫУ** *к. урт. ярҙамл. кар.* **ҡаҙыу.** *Малай атаһына баҡса ҡаҙыша.*

**ҠАҘЫ-ЯЛ** *и. йыйн.* Йылҡы итенең иң тәмле һаналған ҡаҙыһы менән ялы. *Ҡаҙы-ял еймәҫ наҙ инем, ҡаты-ҡото ейеп йөрөйөм.* «Ҡара юрға».

**ҠАЖҠ** *оҡш.* Өйрәк тауышын белдергән һүҙ. *Ҡажҡ итеү.*

**ҠАЖ-ҠАЖ, ҡаж да ҡаж** *оҡш.* Ҡаты йүткергән тауышты белдергән һүҙ. *Ҡаж-ҡаж йүткереү.*

**ҠАЖҠ-ҠАЖҠ** *оҡш.* Ҡабат-ҡабат ҡажҡ иткән тауышты белдергән һүҙ. *Ҡажҡ-ҡажҡ итеү.*

**ҠАЖҠ-ҠОЖҠ, ҡажҡ та ҡожҡ** *оҡш. көс. кар.* **ҡажҡ-ҡажҡ.** *Ҡажҡ-ҡожҡ килеү. Ҡажҡ-та ҡожҡ ҡысҡырыу.*

**ҠАЖ-ҠОЖ, ҡаж да ҡож** *оҡш. кар.* **ҡаж-ҡаж.** *Ҡаж-ҡож йүткереү. Ҡаж да ҡож килеү.*

**ҠАЖҠЫЛДАТЫУ** *к.* Ҡаж-ҡаж иттереү. *Өйрәкте ҡажҡылдатыу.*

**ҠАЖҠЫЛДАУ** [1] *к.* Ҡаж-ҡаж итеү. *Андрей ҡарт ҡажҡылдап йүткерергә кереште.* Һ. Дәүләтшина.

**ҠАЖҠЫЛДАУ** [2] *к.* Ҡажҡ-ҡажҡ ҡысҡырыу. *Өйрәк ҡажҡылдай.*

**ҠАЖЫУ** [1] *к. диал. кар.* **мыжыу 1.**

**ҠАЖЫУ** [2]: **теш ҡажыу** *диал.* теш ҡайрау (*кар.* **теш** [1]).

**ҠАЗА** [*ғәр.*] *и.* **1.** Мал-мөлкәткә зыян килтергән бәлә. *Ҡаза күреү. Ҡазаға ҡалыу. Ҡаза яһау.* ■ *Ат биленләп, өркөп, юлдан сығып, күсәрҙәрен ватты арбаның.. ҡайтып индем. Ҡайтҡас, был ҡазаны һөйләп бирҙем байҙың үҙенә.* С. Кулибай.

**2.** Ҡайғы-хәсрәт килтергән бәлә. *Һөргөн уға ауыр ҡаза булды, күңел әрней, йөрәк ҡыйыла.* М. Хәй.

□ **Ҡаза итеү** ваҡытында үтәлмәгән эште үтәп, өҫтән төшөрөү. *[Ныяҙғол:] Һөйләшеп китеп, аҡшамды оноттанмын. Ҡаза итермен инде.* Һ. Дәүләтшина.

♦ **Аяҡлы ҡаза** ҡайғы, хәсрәт килтергән кешегә, малға ҡарата әйтелә. **Хәйерле ҡаза булһын** ҡаза күргәндә йыуатыу йәки йыуаныу өсөн әйтелә. *[Күсәр хан:] Бына тигән ике тыу бейәмдең муйынын өҙөп әрәм иттең, егет. Хәйерле ҡаза булһын инде.* «Ҡуҙыйкүрпәс менән Маянһылыу».

● *Мал ҡазаһы эткә яҡшы.* Мәҡәл. *Яҡшы ҡатын — ҡаҙна, яман ҡатын — ҡаза.* Мәҡәл.

**ҠАЗАҠ** [*рус.* 〈 *төрк.*] *и.* **1.** Батша Рәсәйендә 15-17 быуаттарҙа Яйыҡ, Дон, Кубань буйҙарына ҡасҡан крәҫтиәндәрҙән, ҡала ярлыларынан торған ирекле кеше.

**2.** Шул кешеләрҙән ойошҡан, 18 быуаттан Рус дәүләтенең сик буйҙарын һаҡларға тейеш булған айырым хәрби сословие. *Дон ҡазаҡтары. Яйыҡ ҡазаҡтары.* / Шул сословиенан ойошҡан ғәскәрҙең һалдаты.

**ҠАЗАЛАНЫУ** *к.* Мал-мөлкәткә зыян килеп, ҡазаға ҡалыу. *Һыйыры ҡазаланыу. Ут сығып ҡазаланыу.* ■ *[Ҡарт:] Ике тапҡыр ат алдым, икеһе лә ҡазаланды.* Д. Юлтый.

**ҠАЗАЛАУ** *к.* **1.** Үлтереп йәки имгәтеп ҡазаға ҡалдырыу. *Ҡорьятмаҫ тирәһе — айыуҙың ояһы. Йыш ҡына айыу йылҡыға йәбешеп, ҡазалап та ҡуя.* Н. Мусин.

**2.** *кар.* **ҡазаланыу.** *Соҡорға төшөп, һыйырым ҡазаланы.*

**ҠАЗАЛЫ** *с.* Ҡазаланып имгәнгән. *Ярлы булыр егеткә ҡазалы мал тап булыр* (Ҡобайырҙан).

**ҠАЗАМАТ** *и. кар.* **каземат.** *Уралдағы ҡазамат хан-вәзиргә өй булыр.* «Ҡараһаҡал».

**ҠАЗЫЙ** [*ғәр.*] *и. тар.* Шәриғәт буйынса, хөкөм итеүсе рухани кеше. *Киҙеү булһаң, шәкерттәрҙе намаҙға ҡыуаһың, бармағандарҙы гөнаһлылар дәфтәренә яҙып, ҡазый әфәндегә бирәһең.* М. Ғафури.

**ҠАИМ** [*ғәр.*] *с. иҫк. кит.* Төп-төҙ. *Сеү, донъя гилеме бер сикһеҙ мишәләр, талиптары бере бер юл тишәләр, кә дин гилеме кеби ҡаим имәстер, кисәге гилеме гаҡыла хуп имәстер.* М. Өмөтбаев.

**ҠАЙ** *а. һөйл. кар.* **ҡайһы.** *Ҡай арала. Ҡай бер кеше. Ҡай ваҡыт.* ■ *Унан Әршит техникумды ташлап, ҡай яҡҡалыр китеп юҡ булды.* Ғ. Сәләм.

**ҠАЙҒЫ** *и.* **1.** Күңелде ғазаплағыс, йәнде әрнеткес ауыр тойғо; хәсрәт. *Ауыр ҡайғы. Ҡаты ҡайғы. Башҡа ҡайғы алыу. Башҡа ҡайғы төшөү. Башҡа ҡайғы һалыу. Ҡайғы баҫылыу. Ҡайғыға батыу. Ҡайғыға ҡалыу. Ҡайғыны баҫыу. Ҡайғыны онотоу. Ҡайғыны уртаҡлашыу. Ҡайғы яңырыу.* ■ *Ник түгәһең былай йәшеңде, ниндәй ҡайғы баҫҡан башыңды?* Д. Юлтый. *Бер ҡайғыһыҙ кеше ятып йоҡлай, беҙҙең татлы йоҡо ҡайҙа икән?* (Халыҡ йырынан).

**2.** Күңелгә ауыр ғазап, йәнгә әрнеү һала торған хәл, ваҡиға һ. б. *Ҡайғы килеү. Ҡайғы күреү.* ■ *Донъя ҡайғыларын бик күп күрҙем, күрер өсөн тыуған баш икән* (Халыҡ йырынан).

**3.** Ниҙәлер хәстәрләгән тынысһыҙ уй; хәстәрлек, мәшәҡәт. *Баш ҡайғыһы. Ҡунаҡ ҡайғыһы. Мал ҡайғыһы. Эш ҡайғыһы.* ■ *Атаһы үлгәс, Аҡназарға уҡыу ҡайғыһы булманы.* Я. Хамматов. *Бер юлы ике хат! Сәй ҡайғыһы китте.* Р. Низамов. **Ҡайғыһы [ла] юҡ** кемдер бер нәмәне һис уйламағанда, бошмағанда әйтелә.

● *Кешене эш бөтөрмәй, ҡайғы бөтөрә.* Әйтем.

**ҠАЙҒЫ-ЗАР** *и. йыйн. кар.* **ҡайғы-хәсрәт.** *Алда балҡый яҡты йондоҙ, унда юҡ һис ҡайғызар.* Д. Юлтый.

**ҠАЙҒЫЛЫ** *с.* **1.** Күңел ғазаплағыс кисерешле; хәсрәтле. *Ҡайғылы кеше.* / Ауыр кисереш менән һуғарыулы; моңло. *Ҡайғылы йыр. Ҡайғылы көй.* / Ҡайғы менән тулы, борсоулы. *Ҡайғылы көндәр. Ҡайғылы саҡ.*

**2.** Ауыр кисерешкә, ҡайғыға һалғыс; күңелһеҙ. *Ҡайғылы хәбәр.*

● *Ҡайғылы ҡайғырғанда, ҡайғыһыҙҙың башы ауыртҡан.* Мәҡәл.

**ҠАЙҒЫРТЫУ** *к.* **1.** Ҡайғы хәленә төшөрөү. *Хат яҙмай ҡайғыртыу. Әйткәнде алмай ҡайғыртыу.*

**2.** Уйлап, хәстәрлек итеү, хәстәрләү. *Кешене ҡайғыртыу. Үҙ эшеңде ҡайғыртыу.* ■ *Минең*

*бабай тукһан йәшендә лә һаман донъя хәлен ҡайғыртты.* Х. Түләкәев.

**ҠАЙҒЫРЫУ** *ҡ.* **1.** Ҡайғы кисереү, хәсрәт кисереү; хәсрәтләнеү. *Ә Илдар, киреһенсә, бик һөйләшеп бармай. Уның күҙҙәре һағышлы, көн һайын кемделер көтә, йыш ҡына күҙ йәштәре күренә, ҡыҫҡаһы, өлкәндәрсә ҡайғыра белә.* «Башҡортостан ҡыҙы», 1986, № 4. *Донъяла нисәмә йыл йәшәнем, бер улым да булманы. Үлеп китһәм, атым да, затым да юҡҡа сыға. Шуның өсөн ҡайғырам* (Әкиәттән).

**2.** Нимәлер, кемдер тураһында борсолоп уйлау. *Бер нәмәгә лә ҡайғырмай был егет: ашай, эсә, типтерә* (Әкиәттән). **Ҡан ҡайғырыу** бик ныҡ борсолоу, ҡайғырыу. *Рәйсә апай был төндө ҡан ҡайғырып сыҡты. Буран тынғас, буровойҙан хәбәр килгәс кенә, тынысланды.* Р. Низамов.

**ҠАЙҒЫРЫШЫУ** *ҡ. урт. ҡар.* **ҡайғырыу.** *Урал батыр хәл өҫтөндә ята. Уның янына ҡайғырышып бөтә тирә-яҡ халҡы йыйыла.* «Урал батыр».

**ҠАЙҒЫ-ХӘСРӘТ** *и. йыйн.* Күп ҡайғы һәм хәсрәт; ҡайғы-зар. *Ҡайғы-хәсрәт кенә күрә икән, тыуған йорттан киткәс, ҡыҙ бала* (Халыҡ йырынан). *Әскенәйем тулы ҡайғы-хәсрәт, ҡурай моңо менән ҡойолһон* (Халыҡ йырынан).

**ҠАЙҒЫҺЫҘ** *с.* **1.** Ауыр кисерештәре, ҡайғылары булмаған; хәсрәтһеҙ. *Ҡайғыһыҙ кеше.* / Ҡайғыһы булмаған, борсолоуһыҙ. *Ҡайғыһыҙ тормош.*

**2.** Бер нәмәгә лә иҫе китмәҫ; бошмаҫ, моңһоҙ. *Ҡайғыһыҙ бала.*

● *Ҡайғыһыҙ кеше ҡара һыуға һимерә.* Әйтем.

**ҠАЙҘА** *а.* **1.** *һор.* Кемдең йәки ниҙең урынын һорағанды белдерә. *Ат ҡайҙа? Ҡайҙа булдың? Ҡайҙа йүгерәһең?* ■ *— Ә Буласа йылғаһы ҡайҙа ҡушыла?* С. Агиш.— *Һеҙ үҙегеҙ кем һуң? Күмәкләшеп ҡайҙа китеп бараһығыҙ?* (Әкиәттән). / Һораулы өндәш һөйләмендә һоҡланыуҙы йәки үкенеүҙе белдерә. *Ҡайҙа юғалды яҙыҡһыҙ аҡ сағым, моңһоҙ сағым!* Ш. Бабич. *Матур һыуҙар бик күп булыр, Димдән матур һыу ҡайҙа!* (Халыҡ йырынан).

**2.** *һор.* Урынға йәки йүнәлешкә ҡарата ситләтелгән һорауҙы белдерә. *Театрҙың ҡайҙа икәнен һораштым да, эҙләп киттем.* С. Агиш. *Биш минуттай шулай һушһыҙ ятты, ҡайҙа ятҡанын да белмәне.* Ғ. Мәсғүт. *Ҡыҙрас ҡайҙа барырға ла белмәгәс, бер кәбән аҫтына инеп, йылынып йоҡлап киткән* (Әкиәттән).

**3.** *р. мәғ.* Юҡлыҡ формаһындағы ҡылым менән ниндәйҙер билдәһеҙ урынды белдерә. *Яңағына себен-серкәй балалап, ир-егеттең башы ҡайҙа ятып ҡалмаған!* Салауат Юлаев.

**4.** *р. мәғ.* «Бер», «һәр», «һис», һ. б. һүҙҙәр менән аныҡ билдәләнмәгән урын йәки йүнәлеште белдерә. *Һәр ҡайҙа юл асыҡ бәхет өсөн.* Ғ. Сәләм. *Ҡискә табан әллә ҡайҙа баҡалар баҡылдаша.* Ш. Бабич. *Тыуған ауыл әллә ҡайҙа, йәһәннәм аҫтында ҡалған һымаҡ булып тойола.* Т. Йәнәби. *Яңы ҡороҡ менән аттар тотоп, китәме икән егет бер ҡайҙа* (Халыҡ йырынан).

**5.** *мөн. мәғ.* Урын эйәрсән һөйләм эсендә килеп, баш һөйләмдәге «шунда» һүҙе менән бергә эш-хәлдең урынын йәки йүнәлешен белдерә. *Партия ҡайҙа ҡуша, мин шунда йәнем-тәнем менән эшләргә әҙермен.* С. Мифтахов. *[Бабай:] Уғығыҙ ҡайҙа төшһә, шунан кәләш алырһығыҙ* (Әкиәттән). / Шул уҡ шартта юҡлыҡ формаһындағы ҡылым йәки шарт ҡылым менән килеп, сикләнмәгән урын һәм йүнәлеште белдерә. *Ҡайҙа ҡарама — ҡый-һай, тап-топ, кирбес ватыҡтары.* «Ағиҙел», 1969, № 10. *Ҡайҙа ғына барһаң, дуҫ-иш кәрәк, дуҫ-иш икән донъя тәрәге* (Халыҡ йырынан).

**6.** *киҫ. мәғ.* Үҙе генә йәки «инде», «һуң», «ул» кеүек көсәйтеүсе һүҙҙәр менән килеп, мөмкинлекһеҙ, сараһыҙлыҡ, юҡлыҡ мәғәнәһен белдерә. *Эш өҫтөндә һиңә уҡыу ҡайҙа, урыҡ-һурыҡ уҡыһаң, уҡыйһың.* Ғ. Амантай. *Уға [шоферға] әйтеп-әйтеп ҡараныҡ инде. Ҡайҙа ул, ҡолағына ла элмәй.* «Совет Башҡортостаны», 1970, 10 ғинуар.

**7.** *ымл. мәғ.* Һорап, өндәп мөрәжәғәт иткәндә әйтелә; ҡана, йә. *— Ҡайҙа, миңә тейешле аҡсаларҙы бир әле.* С. Агиш. *— Ҡайҙа, быймаңды систерәйек, ҡайным.* Р. Низамов.

◆ **Бына ҡайҙа [ул]** айырым урын йәки нәмәгә иғтибар йүнәлткәндә әйтелә. *Новиков .. буфетты асып ҡараны ла, ҡыҫҡырып ебәрҙе: «Бына ҡайҙа ул мал!* Д. Юлтый. **Ҡайҙа бара** (*йәки* **барһын**) кемдеңдер сараһыҙлығын белдергәндә әйтелә; ни эшләй ала. *Яҙғаны шул булһа, ҡарышып ҡайҙа барһын.* З. Биишева. *Ҡайҙа етте шунда* теләһә ни ергә. *[Ямал:] Ошо тоҡтарҙы ғына алайыҡ: ҡабат кәрәкмәҫтәй күреп, ҡайҙа етте шунда ташлап ҡуйғандар.* М. Тажи. **Ҡайҙа инде** теләк, маҡсатты үтәп булмағанда, үкенес белдереп әйтелә. *Төрлө ерҙе йөрөп күрһәң ине лә бит, ҡайҙа инде.* **Ҡайҙа китмәгән** ниҙелер ҡыҙғанмаҫҡа булғанда йәки ҡыҙғанмаҫҡа өндәгәндә әйтелә. *Өмә яһап саптыр бесәнеңде, бер ҡаҙан ашың ҡайҙа китмәгән!* **Ҡайҙа китә [ул]** ниҙеңдер бик күп булырын белдергәндә әйтелә. *Ун йөк утын ҡайҙа китә ул, биш йөгө лә еткән.* **Ҡайҙа ла** һәр ерҙә, бөтә урында.— *Беҙҙең братҡа ҡайҙа ла бер инде.* Д. Юлтый. **Ҡайҙан ҡайҙа** бик алыҫтан алыҫҡа тиклем. *Килмәттәрҙең иген күп шул, баҫыуҙары ҡайҙан ҡайҙа ята.* **Ҡайныһы ҡайҙа** *ҡар.* **ҡайныһы-ҡайҙа.**

● *Ҡайҙа тишек — ел шунда, ҡайҙа тинтәк — һүҙ шунда.* Мәҡәл.

**ҠАЙҘАЛЫР** *билд. а.* Ниндәйҙер асыҡ билдәһеҙ ерҙә булыуҙы йәки ергә йүнәлеүҙе белдерә. *Күк йөҙөн ҡаплаған болоттар ҡояш байышынан өргән ел менән ҡайҙалыр ашығып-ашығып ағалар ине.* Ғ. Дәүләтшин. *Сутылдашып ҡоштар һайрай. Ҡайҙалыр яңғыҙ кәкүк моңая.* Я. Вәлиев.

**ҠАЙҘАН** *а.* **1.** *һор.* Кемдең, нимәнең ни ерҙән, ҡайһы урындан икәнен һорағанды белдерә. *Гөлйөҙөм улынан: «Ҡайҙан киләһең, балам?» — тип һораны.* Һ. Дәүләтшина. / Яуабы мотлаҡ булмаған абстракт һорауҙы белдерә. *[Ҡуҙыйкүрпәс:] Миңә әйттергән ҡыҙ кем ине. Нишләп ул мине ташлап китте? [Әсәһе:] Ҡайҙан алдың был һүҙҙе, улым?* «Ҡуҙыйкүрпәс менән Маянһылыу». *Арғымаҡты яманлап, толпарҙы ҡайҙан табырһың?* (Ҡобайырҙан). / Һораулы өндәш һөйләмдәрендә һоҡланыу, аптырау, шикләнеү, үкенеүҙе белдерә.— *Атам заманындағы китап-*

*тарҙа ҡайҙан коммунистар тураһында яҙылһын инде, алдаҡсы!* Һ. Дәүләтшина. *Иҫ китерлек ҙур бер эш, ҡайҙан булды был уңыш!* Ғ. Амантай.

**2.** *һор.* Урын-ергә ҡарата ситләтелгән һорауҙы белдерә. *Ғәжәп-Сәйет уның [һунарсының] ҡайҙан килгәнен, ҡайҙа юл тотҡанын һорашҡан* (Әкиәттән).

**3.** *р. мәғ.* Аныҡ билдәләнмәгән урын-ерҙе белдерә. *Ишеткәндәй булам әллә ҡайҙан ырыҫ, бәхет, өмөт йырҙарын.* Ш. Бабич. *Ана йорт-ерен ҡара һин уның. Булдыҡлы кеше икәне әллә ҡайҙан күренеп тора.* З. Биишева. *Улар [егеттәр] ҡайҙан булһа ла дарыу табып алып ҡайтырға булған* (Әкиәттән). **Ҡайҙан да ниндәй ҙә булһа** бер ерҙән. *Ҡайҙан да йөҙ етмеш бот ашлыҡ табыр, келәткә илтеп һалыр.* Б. Бикбай. **Ҡайҙан етте шунан** төрлө ерҙән, теләһә ни ерҙән. *Ҡайҙан етте шунан кирбес, таш йыйыштырып усаҡ сығарҙылар.* Ф. Иҫәнғолов.

**4.** *мөн. мәғ.* Урын эйәрсән һөйләм эсендә килеп, баш һөйләмдәге **«шунда»** һүҙе менән бергә эш-хәлдең урынына айырым баҫым яһағанды белдерә. *[Батша:] Ҡайҙан алып килдең — шунда илтеп ташла* (Әкиәттән). *[Ҡыҙ:] Ай, егет, харап булаһың! Ҡайҙан килдең — шунда кит!* (Әкиәттән).

♦ **Ҡайҙан килгән** бик маһайған кешегә ҡарата мыҫҡыллап әйтелә. **Ҡайҙан ҡайҙа** *ҡар.* **ҡайҙа. Әллә ҡайҙан** нисектер, ҡайҙандыр. *Бында килгәнде әллә ҡайҙан белеп өлгөргән.*

**ҠАЙҘАНДЫР** *билдһ. а.* Ниндәйҙер асыҡ билдәһеҙ ерҙән. *Егет ҡайҙандыр икмәк табып, өйөнә ҡайтып инһә, өй эсе гөлт итеп тора, ти* (Әкиәттән.).

**ҠАЙҘАУ** [1] *ҡ. диал. Ҡар.* **өҙләү** [1].

**ҠАЙҘАУ** [2] *ҡ. диал.* Ҡауҙау.

**ҠАЙКА** *с.* **1.** Яҙылып, артҡа ҡирелеп торған. *Ҡайка кәүҙә.* ■ *.. Кинйәнең үҙенә лә ҡайка билле, баҡыр күҙле, ас яңаҡлы был сыҫҡан һырт оҡшап ҡуйҙы.* Ғ. Ибраһимов.

**2.** *диал.* Ялҡау.

**ҠАЙКАЙТЫУ** *ҡ.* Яҙылдырып артҡа ҡиреү. *Башты ҡайкайтыу. Кәүҙәне ҡайкайтыу.*

**ҠАЙКАЙЫУ** *ҡ.* Билдән яҙылып, артҡа ҡиреләү. *Ҡайкайып тороу. Ҡайкайып баҫыу.* ■ *Табынды әйләндереп лыпын ултырған кешеләр корһаҡтары тулып ҡайкая башланылар.* Ғ. Дәүләтшин.

**ҠАЙКАЛАТЫУ** *ҡ.* Билдән яҙылдырыу, артҡа ҡирелтеү. *Нәсимә .. шаярып, көлөп, ҡайкалата баҫып килеп инде лә: «Һаумыһығыҙ, бисәкәйҙәр?» — тине.* Һ. Дәүләтшина.

**ҠАЙКАЛАУ** *ҡ.* Артҡа ҡирелеп сайҡалыу, ҡайҡайып-ҡайҡайып китеү. *Ҡайкалап атлау.* ■ *Председатель .. ҡайкалай биреп, теләр-теләмәҫ кенә уларға [Азаматов менән Шәриповка] эйәрҙе.* Ә. Бәли.

**ҠАЙКАНЛАУ** *ҡ. ҡар.* **ҡайҡалау.** *Сафуан күкрәген кәпәйткән көйө, ҡайкаңлап, Ҡолсобайҙың ҡаршыһына килеп баҫты.* Я. Хамматов.

**ҠАЙКЫ** *с.* Артҡа табан ҡиренке, биле яҙынҡы. *Ҡайкы бил. Ҡайкы кәүҙә.*

**ҠАЙМА** *и.* **1.** Ситтән буйлатып баҫҡан тар баҙыҡ таҫма. Ҡайма баҫыу. ■ *Минең ябай һалдат погондары, ал ҡаймалы йәшел погондар.* Ғ. Әмири. / Ситтән уратып һыҙылған һыҙыҡ. *Ҡара ҡаймалы һүрәт.*

**2.** *диал.* Нағыш.

**ҠАЙМАҠ** *и.* Һөт өҫтөнә ултырған йәки һөттән айырып алынған майлы матдә. *Айырткан ҡаймаҡ. Бешкән ҡаймаҡ. Йылы ҡаймаҡ. Ҡуйы ҡаймаҡ.* ■ *Ташбаткан ауылында уға тиклем сепаратор тотоусы юҡ ине, һөттө бешереп, өҫтөнә ултырған ҡаймаҡты һөҙөп ала торғайнылар.* Ж. Кейекбаев. **Ҡаймаҡ майы** *диал.* аҡ май. **Ҡаймаҡ һыуы** *диал. ҡар.* **айран** 2.

♦ **Һөт өҫтөндәге ҡаймаҡ кеүек** *ҡар.* **һөт.**

**ҠАЙМАҠЛАНЫУ** *ҡ.* **1.** *төш. ҡар.* **ҡаймаҡлау.**

**2.** Ҡаймаҡлыға әйләнеү, ҡаймаҡлы булыу. *Һыйырҙың һөтө ҡаймаҡланған.*

**3.** Аҡһылланып, ҡаймаҡ төҫөнә инеү (күҙгә ҡарата). *Атайым әллә ниндәй асыулы төҫ менән ҡайтып инде.. Уның күҙҙәре ҡаймаҡланған, кәүҙәһе ҡалтырай.* Д. Юлтый.

**ҠАЙМАҠЛАТЫУ** *ҡ. йөкм. ҡар.* **ҡаймаҡлау.** *Ҡатыҡты ҡаймаҡлатыу.*

**ҠАЙМАҠЛАУ** *ҡ.* Ҡаймаҡлы итеү, ҡаймаҡ һалыу. *Ҡаймаҡлап сәй эсеү. Ҡатыҡты ҡаймаҡлау.*

**ҠАЙМАЛАНЫУ** *ҡ. төш. ҡар.* **ҡаймалау** 1, 2. *Ҡаймаланған итәк.* ■ *Ул [герб] ҡыҙыл фонда, ҡояш нурҙары эсендә башаҡтар менән ҡаймаланған ураҡ менән сүкеш һүрәтләнешенән, рус һәм башҡорт телдәрендә «РСФСР», «Бөтә илдәрҙең пролетарийҙары, берләшегеҙ!» тигән һүҙҙәрҙән тора.* Башҡорт АССР-ының Конституцияһы, 1984.

**ҠАЙМАЛАТЫУ** *ҡ. йөкм. ҡар.* **ҡаймалау** 1, 2. *Ҡулъяулыҡты ҡаймалатыу.*

**ҠАЙМАЛАУ** *ҡ.* **1.** Ҡаймалы итеү, ҡайма баҫыу; ҡайыу. *Ҡыҙыҡай .. итәге таҫма менән ҡаймалап тегелгән күлдәген елпелдәтеп ауылға ҡарай йүгерҙе.* Н. Мусин. / Уратып һыҙыу. *Портретты ҡара менән ҡаймалау.*

**2.** *диал.* Ҡаймау.

**3.** *диал.* Ҡайыу, сигеү.

**ҠАЙМАУ** *ҡ.* Ҡайма булып уратыу, ситләп уратыу. *Сәрмәсәнде ҡаймап баҫҡан улар [имәндәр].* Х. Ғиләжев.

**ҠАЙМЫҒЫУ** *ҡ.* **1.** Быуынлы ерҙән яҙа ҡуҙғалып ауыртыу; кимәлйеү. *[Бикә:] Шундай ауыр ағасты тәгәрләтеп, билемде ҡаймыҡтырыр хәлем юҡ.* Ғ. Ғүмәр. *Ун бер тигәс тә ни яман? Уҡ-һаҙаҡлы батыр ир уҡталған аттан йығылып, аяҡ-ҡулы ҡаймығып, яуҙан ҡалһа — шул яман* (Ҡобайырҙан).

**2.** *диал.* Тайшаныу, кәйлегеү.

**ҠАЙМЫҠСЫ: ҡаймыҡсы ҡуңыҙ** һыу өҫтөндә йүгереп йөрөгән йылтыр ҡуңыр төҫтәге йыртҡыс ҡуңыҙ (серәкәй йомортҡаларын ашай).

**ҠАЙМЫҠТЫРЫУ** *ҡ.* Яҙа ҡуҙғалып, быуынды ауырттырыу; кимәлйетеү. *Аяҡты ҡаймыҡтырыу. Билде ҡаймыҡтырыу. Ҡулды ҡаймыҡтырыу.*

**ҠАЙМЫЛТЫУ** *ҡ. ҡар.* **ҡаймыҡтырыу.**

**ҠАЙМЫЛЫУ** *ҡ. диал. ҡар.* **ҡаймығыу** 1.

**ҠАЙНАҒА** *и.* **1.** Ирҙең ағаһы (ҡатынына ҡарата) һәм ҡатындың ағаһы (иренә ҡарата). *Оло ҡайнаға. Бәләкәй ҡайнаға.* ■ *[Алпар:] Бына*

*Әклимә киленде генә алайыҡ. Ул да әрләне мине. Ҡайнаға тип торманы.* Ҡ. Даян.

**2.** Ҡатынға иренең ағай тейеш кешеләре. *[Ямал:] Юҡ, Хафиз ҡайнаға, беҙ һинең янға инеп тормайбыҙ. Беҙ яраштыҡ инде.* М. Тажи.

**ҠАЙНАҒАН** *с.* Ҡайнау хәлеи үткән, ҡайнатып алынған. *Ҡайнаған һыу. Ҡайнаған һөт.*

**ҠАЙНАР** *с.* **1.** Ҡайнап, әле һыуымаған; эҫе. *Ҡайнар аш. Ҡайнар сәй.* ■ *Ҡайнар өйрә эскә йылылыҡ бирҙе.* Д. Юлтый.

**2.** Ныҡ ҡыҙыу, эҫе, ҡыҙған. *Ҡайнар ҡояш. Ҡайнар лава.*

**3.** *күсм.* Тәрән тойғоға, көскә, дәрткә тулы. *Ҡайнар дуҫлыҡ. Ҡайнар мөхәббәт. Ҡайнар рәхмәт. Ҡайнар сәләм. Ҡайнар телмәр. Ҡайнар теләк.* ■ *Һинең хаттар миңә алып килә йөрәгеңдең ҡайнар хистәрен.* Ғ. Әмири. *[Зөлхизә менән Зөлкәрнәй] бер-береһенең ҡайнар ҡосағына ташланып, оҙаҡ баҫып торған.* Н. Иҙелбай. *Әсе йәштәр, ҡайнар ҡандар таммаһын.* М. Кәрим. / Ялҡынлы. *Ҡайнар йөрәк. Ҡайнар күҙ йәше. Ҡайнар һулыш.*

**4.** *күсм.* Бик көсөргәнешле, ҡыҙыу. *Ҡайнар эш ваҡыты.*

**ҠАЙНАРЛАНЫУ** *ҡ.* Ҡайнарға әйләнеү. *Һыу ҡайнарланған.*

**ҠАЙНАРЛАТЫУ** *ҡ.* Ҡайнарға әйләндереү, ҡайнар итеү. *Һәр ҡасан ҡыҙҙырһа көн диңгеҙ йөҙөн ҡайнарлатып, быу булып күккә оса ла, һыу булып ергә төшә.* Ш. Бабич.

**ҠАЙНАТА** *и. диал.* Ҡайны.

**ҠАЙНАТҠЫС** *и.* Һыу ҡайната торған прибор. *Һыу ҡайнатҡыс. Электрлы ҡайнатҡыс.*

**ҠАЙНАТМА** *и. ҡар.* **тоноҡ** [2].

**ҠАЙНАТТЫРЫУ** *ҡ. йөкм. ҡар.* **ҡайнатыу.** *Һыу ҡайнаттырыу.*

**ҠАЙНАТЫЛЫУ** *ҡ.* **1.** *төш. ҡар.* **ҡайнатыу.** *Ҡайнатылған һыу.*

**2.** *эйһ. ф. ҡар.* **ҡайнатыу.** *Көнө буйы аш бешерелде лә сәй ҡайнатылды бөгөн, бер ергә сығылманы.*

**ҠАЙНАТЫУ** *ҡ.* **1.** Ҡайнаған хәлгә килтереү. *Сәй ҡайнатыу. Һыу ҡайнатыу.* ■ *Арыҫландың әсәһе .. һыу тамсылап торған самауырҙы ҡайнатып алып килде.* З. Биишева.

**2.** Ниндәйҙер үҙенсәлек биреү өсөн нәмәне ҡайнаған шыйыҡлыҡта тотоу. *Мәтрүшкә ҡайнатыу. Кер ҡайнатыу.*

**3.** Бешереп, ашарлыҡ хәлгә килтереү. *Варенье ҡайнатыу. Ҡорот ҡайнатыу.* ■ *Әсе эркет ҡайнатып, эремсектәр эретеп, ылашка ҡорот йәйел[де].* М. Буранғол. / Юғары эҫелектә тотоп, ниҙер әҙерләп алыу. *Дегет ҡайнатыу. Һабын ҡайнатыу. Һыра ҡайнатыу. Шәкәр ҡайнатыу.* ■ *Заводка китте ҡайһығыҙ, ҡайһығыҙ ҡырҙа булды: берегеҙ ҡорос ҡайнатты, берегеҙ иген урҙы.* Р. Ниғмәти.

♦ **Баш ҡайнатыу** *ҡар.* **баш.**

**ҠАЙНАУ** *ҡ.* **1.** Юғары эҫелектән пар сығарып быуырлау. *Һурпа ҡайнай. Һыу ҡайнай. Ҡайнап сығыу. Ҡайнап бөтөү. Ҡайнап ултырыу.* ■ *— Сәй ҡайнағанса, серем итеп ал, балам.* Я. Хамматов. / Эсендә ниндәйҙер шыйыҡлыҡ ҡайнаған һауыт тураһында. *Ҡаҙан ҡайнай. Самауыр ҡайнай.* ■ *Новиков мине ҡайнап ултырған силәк эргәһенә алып барҙы.* Д. Юлтый.

**2.** Утта быуырлап ултырған шыйыҡлыҡ эсендә бешеү. *Ит ҡайнай. Һалма ҡайнай.*

**3.** *күсм.* Урғылып хәрәкәт итеү. *Ҡайнап сыҡҡан ҡара болот.* ■ *Ҡарап тирәһендә .. тулҡындар ҡайнай.* З. Биишева. *Ҡайнап ҡына аҡҡан Иҙел аша Тәфтиләүҙәр кисеү таба алмаҫ* (Халыҡ йырынан).

**4.** *күсм.* Күп булып эркелеп, сыуалышыу; мыжғыу. *Майҙанда халыҡ ҡайнай. Урамда машиналар ҡайнап тора.* ■ *Магазин ҡайнай. Халыҡ гөр килә.* С. Агиш. / Эштең уртаһында ҡайнау. ■ *Көрөш утында ҡайнау уны [Д. Юлтыйҙы] күренекле йәмәғәт эшмәкәре итеп сыныҡтырҙы.* Ғ. Хөсәйенов.

**5.** *күсм.* Эштә, хеҙмәттә һ. б. актив ҡатнашыу.

**6.** *күсм.* Хис-тойғо, уй-фекер һ. б. ташып тороу. *Башта уй ҡайнай. Күңелдә хис ҡайнай. Күкрәктә көс ҡайнай. Эстә ҡайғы-хәсрәт ҡайнай.* ■ *Дәртле күкрәктәрҙән ташып, ҡайнап, ялҡынланып сыға йырҙары.* Ғ. Мәсғүт. / Бик ҡыҙған, дәртле, йәнле хәлдә үтеү. *Тормош ҡайнай.* ■ *Бер яҡтан бесән сабыла, икенсе яҡтан йыйыла, өсөнсө яҡтан күбәләнә, дүртенсе яҡтан кәбәнгә ҡойола — эш ҡайнай.* Ғ. Дәүләтшин.

**7.** *күсм.* Көслө хис менән ярһыу. *Асыу ҡайнай.* ■ *Әммә йөрәк һаман тыйылмай, һаман ҡайнай, һаман урғыла.* Ғ. Амантай.

♦ **[Ниҙендер] ҡаҙанында ҡайнау** ниндәйҙер эш йәки ваҡиғаның уртаһында булыу. *Ғафури татар ижтимағи фекер ҡаҙанында ҡайнаны.* Ә. Харисов. **Ҡан ҡайнау** *ҡар.* **ҡан.**[1] **Һарыу ҡайнау** *ҡар.* **һарыу.**[3]

**ҠАЙНАШЫУ** *ҡ.* Мыж килеп, ҡүмәкләп буталыу; сыуалыу. *Йәш-елкенсәктең .. ҡайнашып йырлап йөрөүг мине лә үҙенә тартты.* Т. Йәнәби. *Әхмәҙулла көн дә шулар [геофизиктар] янында ҡайнаша.* Р. Солтангәрәев.

**ҠАЙНЫ** *и.* **1.** Иренең атаһы (ҡатынына ҡарата).

**2.** Атынының атаһы (иренә ҡарата). *Кинйә төргәген асып, ҡайнына бына тигән күлдәк тоттора* (Әкиәттән).

● *Атайым йорто һаламдыр — ожмах булып күренә, ҡайным йорто ҡабыҡтыр — тамуҡ булып күренә.* Мәҡәл.

**ҠАЙНЫ-ҠАЙНАҒА** *и. йыйн.* **1.** Иренең атаһы, ағай тейеш кешеләре (ҡатынына ҡарата) — *Дөрөҫ, хәҙер килендәргә ҡайны-ҡайнағалар менән һөйләшмәҫкә тигән закон бөткән.* Һ. Дәүләтшина.

**2.** Ҡатынының атаһы, ағай тейеш кешеләре (иренә ҡарата).

**ҠАЙНЫ-ҠӘЙНӘ** *и. йыйн.* Иренең ата-әсәһе (ҡатынға ҡарата) һәм ҡатынының ата-әсәһе (иренә ҡарата). *Уның [Ҡобораның] иренән туҡмалып, ҡайны-ҡәйнәһенән ҡағылып, кеше күҙенә күренә алмай ятҡан көндәре аҙ булманы.* Б. Бикбай.

**ҠАЙНЫҺЫ** *а.* **1.** *һор.* Күптең араһынан берәүҙе айырып күрһәткәндә ҡулланыла.— *Былар-ҙың ҡайныһы һинең ҡыҙың була?* (Әкиәттән). — *Буйһонһаң — иркен йәшәрһең, буйһонмаһаң — үлерһең. Һин ҡайныһына риза?* (Әкиәттән).

**2.** *билдһ.* Күптең араһынан берәүҙе айырып ҡына белмәгәндә ҡулланыла. *Ҡайныһы Соня булғандыр — асыҡ белеп етмәнем.* Д. Юлтый. / Тиң киҫәктәр алдында ҡабатланып, «береһе», «икенсеһе» һ. б. мәғәнәһендә ҡулланыла. *Быларҙың ҡайныһы көҙән ҡапҡанларға, ҡайныһы бүре ҡыуырға, ҡайныһы төлкө юлларға сығып китә.* Ғ. Дәүләтшин. **Һәр ҡайныһы** бөтәһе, һәммәһе; һәр береһе. *Ниндәй генә һөнәрҙе алма, һәр ҡайныһы кешенән әҙерлек, белем талап итә.* М. Сөндөклө.

**ҠАЙНЫҺЫ-ҠАЙҘА** *р.* Теләһә ҡайҙа. *Ҡайныһы-ҡайҙа таралыу. Ҡайныһы-ҡайҙа ятыу.*

**ҠАЙНЫҺЫ-ҠАЛАЙ** *р.* Төрлөһө төрлөсә. *Ҡайныһы-ҡалай тәгәрәп йоҡлап киткән.*

**ҠАЙРАҠ** *и.* **1.** Ҡорал-ҡорамалды үткерләй торған үҙенә бер төрлө таш. *Ҡайраҡ ташы.* ■ *Бик шәп ҡайраҡ ул. Салғы йөҙөнә бер-ике тартып ебәрәһең — салғың ҡылыстан да үткер була ла ҡуя.* З. Ураҡсин.

**2.** *күсм.* Икмәктең бешеп етмәй, тығыҙ булып ҡарайып торған урыны. // *Ҡайраҡ икмәк.*

♦ **Ҡом ҡайраҡ** наждак ташы.

**ҠАЙРАҠЛАНЫУ** *ҡ.* Ныҡ булып ҡатыу. *Ҡайраҡланып бешкән икмәк.* ■ *Тупраҡ ямғырҙан һуң ҡайраҡланып ташҡа әйләнде.* «Совет Башҡортостаны», 1970, 27 февраль.

**ҠАЙРАЛЫУ** *ҡ. төш. ҡар.* **ҡайрау.** *Ҡайралған ҡылысыбыҙ ҡыныбыҙҙа.* М. Ғафури.

**ҠАЙРАМ** *и. диал. ҡар.* **һыуһын.**[2] *Иртәнге ҡайрам. Киске ҡайрам.* **Ҡайрам ҡандырыу** бер быуа бесән сапҡас, һыуһынды ҡайтарыу.

**ҠАЙРАТЫУ** *ҡ. йөкм. ҡар.* **ҡайрау.** *Бысаҡ ҡайратып алыу.*

**ҠАЙРАУ** *ҡ.* Ҡайраҡ менән үткерләү. *Балта ҡайрау. Башаҡ ҡайрау. Бысаҡ ҡайрау.* ■ *Ҡындан алып алмас ҡылысымды, Урал ташҡайына ҡайраным* (Халыҡ йырынан). *Күк тимер ҡайрау менән алмас булмаҫ.* Аҡмулла.

♦ **Теш ҡайрау** *ҡар.* **теш.**[1]

**ҠАЙРАШЫУ** *ҡ. урт. ярҙамл. ҡар.* **ҡайрау.** *Балта ҡайрашыу.*

♦ **Тел ҡайрашыу** *ҡар.* **тел 2.**

**ҠАЙРЫ** *и. диал. ҡар.* **ҡайыр** 1.

**ҠАЙСАН** *а. диал.* Ҡасан.

**ҠАЙСЫ** *и.* Ҡара-ҡаршы тоташтырылған ике бысаҡтан торған ҡырҡыу ҡоралы. *Ҡағыҙ ҡайсыһы. Тимер ҡайсыһы.* ■ *Өҫтәлдәрҙә көмөш ҡайсы — ебәк ҡулдәк бесәләр* (Халыҡ йырынан).

**ҠАЙСЫЛАНДЫРЫУ** *ҡ. ҡар.* **ҡайсылау** 2. *Ҡолаҡты ҡайсыландырыу.*

**ҠАЙСЫЛАНЫУ** *ҡ. төш. ҡар.* **ҡайсылау** 1.

**ҠАЙСЫЛАТЫУ** *ҡ. йөкм. ҡар.* **ҡайсылау** 1. *Сәсте ҡайсылатыу.*

**ҠАЙСЫЛАУ** *ҡ.* **1.** Ҡайсы менән тигеҙләп, мөнтәп ҡырҡыу. *Балаңың сәсен ҡайсылау.*

**2.** Текә сәнсеп, алмаш-тилмәш йөрөтөү (хайуандарҙың ҡолағына ҡарата). *Ҡуян ҡолағын ҡайсылай.* ■ *Ә өнһөҙ боландар, өркәк ҡоралайҙар .. ҡолаҡтарын ҡайсылап тора ла, бик алыҫҡа ҡасып юғала.* И. Ғиззәтуллин. *Рафиҡ, быларҙың барыһын да үҙенең уйынан үткәргәндән һуң, ҡолаҡтарын ҡайсылап барған ерән атҡа өндәшә.* Ғ. Хәйри.

**ҠАЙТА** *р.* Ҡабат, яңынан. *Ҡайта-ҡайта уҡыу.*

● *Ҡайта сапҡан яу яман, ҡайта сыҡҡан һүҙ яман, ҡайта килгән ҡыҙ яман.* Әйтем.

**ҠАЙТАЛАЙ** *р. диал.* Ҡайтышлай.

**ҠАЙТАЛАУ** *ҡ.* **1.** Ҡабатлап эшләү, әйтеү һ. б. *Ҡабатлап килеү. Ҡабатлап әйтеү. Әкиәтте ҡабатлап һөйләү.*

**2.** *диал. ҡар.* **ҡайтауыллау** 1.

**ҠАЙТАЛЫУСАНЛЫҠ** *и. физ.* Есемдең элекке торошона ҡайта алыу үҙенсәлеге. *Ҡайталыусанлыҡ көсө. Күләмдең ҡайталыусанлығы.*

**ҠАЙТАНАН** *р.* Тағы бер тапҡыр; яңынан, ҡабаттан. *Ҡайтанан эшкә тотоноу. Ҡайтанан башлау.* ■ *Мин ҡайтанан ауыл советында эшләй башланым.* Т. Йәнәби. *Фәнни техник прогресты тиҙләтеү, эшләп килгән производствоны техник яҡтан ҡайтанан ҡоралландырыу һәм реконструкциялау буйынса эш активлашты.* «Совет Башҡортостаны», 1985, 9 ноябрь.

**ҠАЙТАРА** *р.* Тапҡыр, ҡабат. *Килен өйгә ингәндә, түргә ҡарап, өс ҡайтара сәләм ҡылыр.* М. Буранғолов.

♦ **Ҡайтара һуғыу** кире һуғыу, тотҡарлау. *Эште ҡайтара һуғыу.*

**ҠАЙТАРҒЫС: йәшен ҡайтарғыс** *шул уҡ* **йәшен тотҡос** (*ҡар.* **йәшен**).

**ҠАЙТАРМА** *и.* Ниҙең дә булһа кирегә бөкләп ҡуйған өлөшө. *Еңдең ҡайтармаһы. Итек ҡуныһының ҡайтармаһы. Яғаның ҡайтармаһы.* // *Ҡайтарма яға.* ■ *Ҡойманан дворник ҡуптарып алған листовканы городовойҙарҙың береһе ең ҡайтармаһына тыҡты.* Х. Мохтар.

**ҠАЙТАРМАЛЫ** *с.* Ҡайтарып, кирегә бөкләп ҡуймалы. *Ҡайтармалы ҡуныс. Ҡайтармалы яға.*

**ҠАЙТАРМЫШ** *и. диал.* Ҡаршы бирелгән бүләк, яуап бүләге.

**ҠАЙТАРТЫУ** *ҡ. йөкм. ҡар.* **ҡайтарыу.** *Ҡайтартып алыу.*

**ҠАЙТАРЫЛЫУ** *ҡ.* **1.** *төш. ҡар.* **ҡайтарыу.** *Ҡайтарылған тулҡындар (физ.).* ■ *Һыйыр-һарыҡ ҡураға ҡайтарылды.* Ф. Иҫәнғолов.

**2.** Кирегә әйләнеү, кирегә бөкләнеү. *Салғының йөҙө ҡайтарылған.* Ғ. Аллаяров.

**ҠАЙТАРЫМ** *с.* Артҡандан кире ҡайтарып бирелгән. *Ҡайтарым аҡса.*

**ҠАЙТАРЫУ** *ҡ.* **1.** Ҡайтырға ирек ҡуйыу, рөхсәт биреү. *Хеҙмәттән ҡайтарыу.* ■ *Муйылбикә олораҡтарҙың береһен дә ҡайтарманы: «Юҡ-юҡ, күҙғалмағыҙ. Самауыр яңыртам»,— тине.* Һ. Дәүләтшина. / Ҡайтып китергә мәжбүр итеү. *[Председатель] йәштәрҙе ҡайтарып бөткәс, клубты бикләп, асҡысты кеҫәһенә һалды.* М. Тажи.

**2.** Өйгә, торған ергә ниҙер ебәреү йәки алдырыу. *Урмандан утын ҡайтарыу. Тирмәндән он ҡайтарыу.*

**3.** Киткән урындан кире саҡырыу; алып ҡайтыу. *[Ҡарасәс] Өмөтбайҙы ҡайтарыр өсөн эшләгән урынына китте.* Ғ. Дәүләтшин. *Боғым хан һауынға йылҡы ҡайтарырға ҡушҡан* (Әкиәттән). / *күсм.* Тәүге хәлгә килтереү. *Һушты ҡайтарыу. Дуҫлыҡты ҡайтарыу. Тәбиғәт матурлығын ҡайтарыу.* ■ *Егет йәнлектәрҙе үҙ сифатына ҡайтарып ауыл яғына юл ала* (Әкиәттән).

**4.** Киткән ерҙән кире бороу; кире килтереү. *Ҡатарҙан сыҡҡан мал булһа, [Айбулат] уны ҡай-*

*тара.* Һ. Дәүләтшина. / *күсм.* Кире һүрелтеү, дүндереү. *Уйҙан ҡайтарыу. Ситкә китеү ниәтенән ҡайтарыу.*

**5.** Килгән ерҙән кирегә бороу; кире ҡағыу. *Атаҡаны ҡайтарыу. Ҡайтара һуғыу.* ■ *Инде хәҙер ни эшләргә кәрәк? Дошман килгәндә, яу ҡайтарыу кәрәк* (Әкиәттән). / *күсм.* Ниҙеңдер тәьҫирен бөтөрөү. *Сихыр ҡайтарыу. Күҙ ҡайтарыу.*

**6.** Кире йүнәлешкә бороу (яҡтылыҡты, тауышты һ. б.).

**7.** Алған нәмәне кире килтереү, кире биреү. *Аҡсаны ҡайтарыу. Бурысты ҡайтарыу.* ■ *Йөҙөк мең мәшәҡәт менән хужаһына ҡайтарып бирелде.* С. Агиш. / Кемдеңдер эш-ҡылығына ни менәндер яуап биреү. *Әжерен ҡайтарыу.* ■ *[Һөнәрсе:] Һинең был тиклем яҡшылығыңды ни менән генә ҡайтара алырмын икән һуң мин.* З. Биишева. / Ҡаршы яуаплау, яуап итеү. *Ҡайтарып әйтеү.* ■ *Бай һүҙенән Дәүләтбайҙың күңеле әрнеһә лә, һүҙ ҡайтарырға батырсылығы етмәне.* И. Көҫәпҡол. / Яуап рәүешендә ниҙер ҡылып, ҡәнәғәтләнеү тойғоһо кисереү. *Асыуҙы ҡайтарыу. Үсте ҡайтарыу.* ■ *[Шәүрә — Аҡмырҙаға:] Ағаң, Көбәк тархан, хәйлә менән атайымдың башын ашаны. Ә һин, кейәү булыр кеше, батыр егет, ниңә атам ҡонон ҡайтарманың.* Б. Бикбай.

**8.** Кирегә бөкләү, ҡаршыға әйләндереү. *Яғаны ҡайтарыу.* ■ *Йомро Талип балсыҡ аласыҡ алдында сабата ҡайтарып ултыра ине.* М. Кәрим. / Аҫтын-өҫкә әйләндереү. *Бураҙна ҡайтарыу.* ■ *Егеттәр .. рельсты ҡайтарып ташланылар, шпалдарҙы берәм-берәм ситкә ырғыттылар.* Ә. Ихсан. *Башымдағы аҡ ҡалпаҡты ел ҡайтарып төшөрҙө* (Халыҡ йырынан).

**9.** Үткер ҡоралды үтмәҫләү, йөҙөн тупаҫландырыу. *Бәкенең йөҙөн ҡайтарыу. Салғының йөҙөн ҡайтарыу.*

**10.** *күсм.* Килтереп бәйләү, төкәтеү. *[Ҡасим:] Геолог бурысын йөҙәр битләп ҡағыҙ бысратыуға ҡайтарып ҡалдырыусы, тип уйлағайным уны.* Н. Мусин.

**11.** *күсм.* Көсөн, кимәлен кәметеү; әҙәйтеү. *Ажарын ҡайтарыу.* ■ *Аҡназарҙың өмөтөн ҡырҡырға, күңелен һүрелтергә, ҡарыуын ҡайтарырға аҙаплана.* Ғ. Дәүләтшин.

● *Ҡумаҡлағән яу ҡайтарған.* Мәҡәл.

**ҠАЙТАУАНЛАУ** *ҡ.* Бер китеп, бер ҡайтып йөрөү, ҡабат-ҡабат ҡайтҡылау. *Ҡайтауанлап йөрөү.*

**ҠАЙТАУЫЛЛАШЫУ** *ҡ. урт. ҡар.* **ҡайтауыллау** 1.

**ҠАЙТАУЫЛЛАУ** *ҡ.* **1.** Уйҙан, ниәттән кире ҡайтыу; кире уйлау. *[Бибеш:] Үҙһүҙлелек, кире ҡайтауыллай белмәү беҙҙең бөтәбеҙҙә лә етерлек ул.* З. Биишева.

**2.** *диал.* Ҡайтауанлау.

**ҠАЙТМАЛЫ** *с.* **1.** Ҡабатлап килеүсән, ҡабат башланыусан. *Ҡайтмалы сир. Ҡайтмалы тиф.*

**2.** Тәүге хәлгә, күләмгә кире ҡайтыусан. *Ҡайтмалы пружина.*

**3.** *күсм.* Асыуы тиҙ баҫылыусан. *Кенә ҡыумай ул, әйтмәле лә ҡайтмалы.*

**ҠАЙТЫЛЫУ** *ҡ. төш. ҡар.* **ҡайтыу** 1—3. *Иҫегеҙҙәлер, Эстониянан Салауат һәм уның көрәштәштәре тураһында 80-се йыл баштарында көтөлмәгән асыштар алып ҡайтылғас, нисек таң ҡалғайны халыҡ.* «Совет Башҡортостаны», 1986, 9 июль.

**ҠАЙТЫМЛАУ** *ҡ. ҡар.* **ҡайтауыллау** 1.

**ҠАЙТЫМҺАҠ** *с.* Асыуын тиҙ онотоусан, тиҙ ҡайтыусан. *Ҡайтымһаҡ кеше.* ■ *Ярһыуы тиҙ баҫылған ҡайтымһаҡ ҡатын, иңбашына һалынып төшкән киң яулығын ҡайырып, йөҙөн ҡапланы ла яҡты төшмәгән ҡараңғы мөйөшкә боролдо.* Я. Хамматов.

**ҠАЙТЫМҺАҠЛАНЫУ** *ҡ.* Ҡайтымһаҡ булып китеү. *[Әклимә кире ҡайтымһаҡланып:] Ә шулай ҙа, Нәсимәкәй, һин хаҡлы, «хәйләһеҙ донъя файҙаһыҙ», тигәндәр бит ..* Н. Иҙелбай.

**ҠАЙТЫУ** *ҡ.* **1.** Торған, сығып киткән ергә кире килеү. *Ашығып ҡайтыу. Ат менән ҡайтыу. Ауылға ҡайтыу. Илгә ҡайтыу. Өйгә ҡайтыу. Сәй эсергә ҡайтыу. Эштән ҡайтыу. Юлдан ҡайтыу. Йәйәү ҡайтыу. Кире ҡайтыу. Ҡайта һалыу. Ҡайтырға сығыу. Ҡасып ҡайтыу. Йүгереп ҡайтыу.* // *Ҡайтыр юл.* ■ *[Ҡарасәс:] Һылыуҡайҙың атаһы алтын ҡаҙырға киткәйне. Ҡайтыр ваҡыты етте, хәҙер ҡайтыр.* Ғ. Дәүләтшин. *Яуға ғына киткән Салауаттың аҡтынайы ҡайтты, үҙе юҡ* (Халыҡ йырынан). *Ялан еркәйҙәрҙең кәкүге юҡ, кире Уралҡайыма ҡайтайым* (Халыҡ йырынан). / Билдәле бер урынға килтерелеү. *Урманда ҡырҡып ҡалдырылған бүрәнәләр барыһы ла ҡайтҡан, өйөп ҡуйылған* (Әкиәттән). / *күсм.* Берәй нөктәгә, урынға килеп төкәлеү, бәйләнеү. *Беҙҙең бөтә фекер бер нәмәгә ҡайтып ҡала.* Д. Юлтый.

**2.** Ҡалдырған, туҡтаған эшкә, һүҙгә һ. б. кире әйләнеү. *Фәнгә ҡайтыу. Әҙәбиәткә ҡайтыу.* ■ *Әхмәтов Салауат темаһына йәнә ҡайтып, «Тау бөркөтө» тигән балет әҫәре яҙҙы.* «Совет Башҡортостаны», 1968, 5 апрель. / Ҡабат ғәмәлгә килеү, яңынан килеп сығыу. *Окопҡа ингәс, ул матурлыҡтар һис ҡайтмаҫ, мәңге ҡайтмаҫ кеүек тойола.* Д. Юлтый. *Элекке дуҫлыҡ ҡабаттан ҡайтты.* С. Агиш.

**3.** Тәүге хәлгә, тормошҡа яңынан килеү. *Аҡылға ҡайтыу.* ■ *Йәй етеү менән бында бөтә нәмә үҙ урынына ҡайта: һыу кәмей, күлдәр ҡорой.* «Совет Башҡортостаны», 1966, 29 сентябрь. *[Тайба инәй — Хамматҡа:] Утә лә ябыҡ, утә лә йонсоу инең. Әле инде, аллаға шөкөр, элекке төҫөңә ҡайта яҙҙың.* З. Биишева.

**4.** Кире йүнәлешкә боролоу (яҡтылыҡ, тауыш һ. б.).

**5.** Тотонолған, алынған ерҙән кире ҡулға инеү. *Малсылыҡҡа түккән аҡса өс-дүрт йыл эсендә икеләтә ҡайтты.* / Кемдеңдер эш-ҡылығына ҡарата ни менәндер яуап бирелеү. *[Бай:] Донъяныҡы донъяла ҡайтһын: быны һиңә ике һөйәк ит* (Әкиәттән).

**6.** Ҡоралдың үткерлеге бөтөү, үтмәҫләнеү. *Салғының йөҙө ҡайтҡан.* ■ *[Ҡарам] атаһының йөҙө ҡайтҡан балтаһын ҡайрап алды ла урам ҡапҡаһын йүнәтергә тотонодо.* Н. Мусин.

**7.** Билдәле бер кимәлдән кәмеү; әҙәйеү. *Ажары ҡайтҡан. Аяҡтың шеше ҡайтҡан. Ғәйрәте ҡайтҡан. Көндөң эҫеһе ҡайтҡан. Күҙ нуры ҡайтҡан.*

*Ҡарыуы ҡайтҡан.* ■ *Һыу ҡайта. Туғай көнө-сәғәте менән йәшәрә бара.* Ф. Иҫәнғолов.

**8.** *күсм.* Кире һүрелеү, кире сигенеү (фекерҙән, һүҙҙән һ. б.). *Ҡарарҙан ҡайтыу.* ■ *Салих әле күргән ваҡиғаны һөйләмәксе булды ла, уйынан ҡайтты.* Х. Мохтар.

♦ **Асылға ҡайтыу** *ҡар.* **асыл. Атлы килеп, йәйәү ҡайтыу** *ҡар.* **атлы. Күңел ҡайтыу** *ҡар.* **күңел.**

**ҠАЙТЫШ** *с.* Сифат йәһәтенән сағыштырмаса түбән; насарыраҡ. *Ҡайтыш булыу.* ■ *Бындағы квартира Ишембайҙағынан, әлбиттә, күп ҡайтыш ине.* Х. Ғиләжев. *Күк толпар ғәҙәттәгенән ҡайтыш сапҡан* (Әкиәттән). / Күләм-дәрәжә йәһәтенән сағыштырмаса кәм; әҙерәк, бәләкәйерәк, көсһөҙөрәк. *Йәйҙең коро булыуы сәбәпле, иген былтырғынан ҡайтыш. [Рифғәт:] Көс яғынан мин уға ҡарағанда ҡайтышыраҡ.* Ш. Янбаев. *Утын быйыл былтырғынан ҡайтыш әҙерләнгән.*

**ҠАЙТЫШЛАЙ** *р.* Ҡайтып барған ыңғайҙа, ҡайтҡан юл ыңғайында. *Ҡайтышлай инеп сығыу. Ҡайтышлай һуғылыу. Эштән ҡайтышлай.* ■ *Владимир Ильич һөргөндән ҡайтышлай Өфөгә килгән.* «Совет Башҡортостаны», 1964, 23 ғинуар.

**ҠАЙТЫШЫ** *р. диал.* Ҡайтышлай.

**ҠАЙТЫШЫУ** *ҡ.* **1.** *урт. ҡар.* **ҡайтыу** 1. *[Ғәйни — Сахапҡа:] Алай, был көлтәне алып ҡайтышһам, теге мин һеҙгә бирергә тейеш булған бер арба көлтәнән котолам икән.* Т. Йәнәби.

**2.** Йыйылған ерҙән ҡайтырға таралыу. *Ҡунаҡтар ҡайтышты.* ■ *Кешеләр ҡайтышып бөттө.* М. Кәрим.

**ҠАЙҺЫ** *а.* **1.** *һор.* Күптең араһынан береһен айырып белергә теләгәндә исем алдына ҡуйыла. *[Прокурор:] Бында Мәхмүтов тигән егет бармы? Ҡайһы палатала ул?* С. Агиш. *[Урал батыр:] Бабай, Тереһыу шишмәһенә ҡайһы юл бара?* «Урал батыр».

**2.** *билдһ.* Күптең араһынан береһен айыра алмағанда исем алдынан ҡуйыла. *Тимербулат атаһының сисеп тотторған бүркен алып, ҡайһы сөйгә элергә белмәй,.. урындыҡ буйлап йүгерҙе.* Һ. Дәүләтшина.

**3.** *билдһ.* Теге йәки был төшөнсәне яҡынса билдәләгәндә әйтелә. *Ҡайһы [бер] ваҡыт. Ҡайһы [бер] кеше. Ҡайһы [бер] эш.* ■ *Ҡайһы бер ҡыҙҙар көлөп, түҙә алмайынса күрше бүлмәгә сығып киттеләр.* Д. Юлтый. *Шул кәбеҫтә һурпаһын көн дә берәр алабыҙ, ҡайһы көндө бик аҙ булһа, түйыр-түймаҫ ҡалабыҙ* (Бәйеттән). / Тиң киҫәктәр менән ҡабатланып, «береһе», «икенсеһе» һ. б. мәғәнәһендә һанағанда ҡулланыла. *Ярылған аяҡлы, ҡайһы нәҙек, ҡайһы тәпән кеүек тәпәш дуҫтарым иҫемә төштө.* С. Агиш.

♦ **Ҡайһы берҙә** ваҡыты менән, бәғзе бер ваҡыт. *Ҡайһы берҙә эс бошоп китә.* **Әллә ҡайһы ниндәйҙер, билдәһеҙ.** *Әллә ҡайһы илдәрҙән әллә ниндәй батшалар .. әллә нисәмә кеше ебәргән, ти* (Әкиәттән).

● *Ҡайһы ерең ауыртһа, йәнең шул ерҙә.* Әйтем.

**ҠАЙҺЫ-ҠАЙҘА** *р. ҡар.* **ҡайныһы-ҡайҙа.**

**ҠАЙҺЫ-ҠАЛАЙ** *р. ҡар.* **ҡайныһы-ҡалай.**

**ҠАЙҺЫЛАЙ** *р. ҡар.* **ҡалай** ². *Ирен ҡайһылай итеп кейендерергә белмәйенсә Зәлифә бөтөрөләп йөрөй. Ике тапҡыр күлдәген алмаштыртты, өс мәртәбә галстук бәйләтте.* Н. Ҡотдосов.

**ҠАЙҺЫНЫҺЫ** *а. ҡар.* **ҡайныһы.**

**ҠАЙҺЫҺЫ** *а. ҡар.* **ҡайныһы.** *Уҡыуҙамы, сиренле яҙҙамы, ҡайһыһында юҡ һуң мөхәббәт?! Ҡайһыһы һуң ут ҡабыҙҙы икән ике йөрәктә?* Ғ. Сәләм.

**ҠАЙШАЙЫУ** *ҡ. диал.* Ҡайҡайыу.

**ҠАЙШАЛАНЫУ** *ҡ. һир.* **1.** Ҡайҙа барырға белмәй тегеләй-былай тайпылыу. *Ат ҡайшаланды ла китте.*

**2.** *күсм.* Һылтау табып, ситләшергә тырышыу. *Минең менән бармаҫҡа ҡайшалана ул.*

**ҠАЙШАЛЫУ** *ҡ. диал.* **1.** Тайпылыу. *Юл тауҙарға барып еткәс, тағы уңға борола, һулға ҡайшала.* А. Таһиров.

**2.** Ҡайҡайыу. *Артҡа ҡайшалыу.*

**ҠАЙШАҢЛАУ** *ҡ.* **1.** Ян-яҡҡа борғаланыу. *Был ат арыны шикелле, ҡайшаңлай башланы.*

**2.** *күсм.* Эш, йомоштан ситләшергә тырышып борғоланыу. *Йомоштан ҡайшаңлау.*

**ҠАЙЫҘ** *и.* **1.** Йәш тал, йыла, ҡараманың һыҙырып алған ҡабығы. *Бесәне түгел, һаламы ла наҡыҫлана башлағас, [ҡатындар] йәш өйәңке, ҡарама ҡайыҙы ашаталар ине малға.* Х. Назаров.

**2.** *диал.* Күшкә.

**ҠАЙЫҘЛАНЫУ** *ҡ. төш. ҡар.* **ҡайыҙлау.** *Ҡайыҙланған ағас.*

**ҠАЙЫҘЛАТЫУ** *ҡ. йөкм. ҡар.* **ҡайыҙлау** 1, 2. *Ағасты ҡайыҙлатыу.*

**ҠАЙЫҘЛАУ** *ҡ.* **1.** Ҡабығын һыҙырыу, әрсеү (ағасты). *Урманға килгән дә был [Алдар], бер ағасты йығып, ҡайыҙлай ғына башлаған икән, ҙур ғына бер шайтан килеп сыҡҡан* (Әкиәттән).

**2.** *күсм.* Сыбыртҡы йә сыбыҡ менән туҡмау; сыптырыу. *Ну, ҡулындағы сыбыртҡыһын тартып алып үҙен ҡайыҙларға!* Ф. Иҫәнғолов. / Ныҡ итеп тиргәү, әрләү. *[Аллаҡаев — Ҡәҙриәгә:] Ә кемде донъя яңғыратып хаҡарат һүҙҙәр менән ҡайыҙлай инегеҙ?* С. Кулибай.

**3.** *күсм.* Көслөк, мутлыҡ менән мал-мөлкәт йолҡҡолау, талау. *[Ғиззәт:] Становой өсөн Моҡай кеҫәһен ҡайыҙлау батшаны яҡлауға ҡарағанда ла файҙалыраҡ ул.* Х. Ибраһимов.

**ҠАЙЫҠ** *и.* **1.** Таяҡ менән этеп йөрөтә торған, ырып яһалған боронғо бәләкәй еңел кәмә. *Ҡайыҡ яһау. Һыуға ҡайыҡ төшөрөү.*

**2.** Ишкәкле кәмә. *Ҡайыҡ менән һыуҙа йөрөһәң ишкәк ишеп, шатлыҡтары йәндәреңдән китә кисеп.* М. Ғафури.

**ҠАЙЫҠСЫ** *и.* Ҡайыҡ йөрөтөүсе.

● *Кәмәсе килгәндә ҡайыҡсы ҡаса.* Мәҡәл.

**ҠАЙЫЛЫУ** *ҡ. төш. ҡар.* **ҡайыу.** *Ҡайылған түбәтәй.*

**ҠАЙЫМ** [*ғәр.*]: **киәмәт ҡайымы** *дини* киәмәт ҡубыуы. *[Мужик — мулла менән мәзингә:] Киәмәт ҡайымы көнөнә тиклем ер йөҙөндәге халыҡтар ошолай буталып бөтөр, ти китап* (Көләмәстән).

**ҠАЙЫМЛАШЫУ** *ҡ. диал.* Ҡыр талашыу (*ҡар.* **талашыу**).

**ҠАЙЫН** *и.* Беше аҡ ҡабыҡлы, япраҡлы ағас. *Аҡ ҡайын. Йәш ҡайын. Ҡуш ҡайын. // Ҡайын*

*саңғы. Ҡайын утын.* ■ *Урал урманында, тау буйында йәйелеп үҫә матур аҡ ҡайын.* В. Ишемғол. *Мин ҡайын туҙынан яһалған түйыҙ менән еләккә йөрөгәнемдә әле булһа һағынам.* В. Нафиков. **Кәрлә ҡайын** һыуыҡ яҡтағы ваҡ ҡайын. **Ҡара ҡайын 1)** көньяҡта үҫә торған ҡабығы ҡара ваҡ ҡайын; 2) *диал.* эт муйылы (*кар.* **муйыл**). **Ҡайын бәшмәге** *кар.* **бәшмәк. Ҡайын ите** ҡайындың ҡабығы менән ағасы араһындағы лайлалы ҡатлам. *Аллаяр Маврингә башҡорт халҡы араһында ҡайын ите ашау гәҙәте барлығын, ҡайындың туҙын, күшмәген һыҙырып ташлағандан һуң ҡатыҡҡа ҡушып ашау өсөн бик тәмле бер нәмә килеп сыҡҡанын һөйләне.* Ш. Шәһәр. **Ҡайын** итләү ҡайындың итен ҡырып ашау. **Ҡайын кимеге** *диал.* ҡайын ите. **Ҡайын һыуы** иртә яҙ ҡайындан алына торған татлы һыу.

◆ **Ҡайын гөлө** *кар.* **гөл.**

**ҠАЙЫНАТА** *и. диал.* Ҡайны.

**ҠАЙЫНБИКӘ** *и. кар.* **ҡәйенбикә**

**ҠАЙЫНГӨЛ** *и. шул уҡ* **ҡайын гөлө** (*кар.* **гөл**).

**ҠАЙЫНЙЕҘНӘ** *и. кар.* **ҡәйенйеҙнә.**

**ҠАЙЫНЙЕҢГӘ** *и. кар.* **ҡәйенйеңгә.**

**ҠАЙЫНЛЫҠ** *и.* Өйкөлөшөп ҡайын үҫкән ер. *Мылтыҡ тауышына ҡаршы түбәләге ҡайынлыҡта ҡарғалар ҡарҡылдап ҡуйҙы.* М. Тажи.

**ҠАЙЫНҺЕҢЛЕ** *и. кар.* **ҡәйенһеңле.**

**ҠАЙЫР** [1] *и.* Ағастың һыҙырып алынған ҡаты ҡабығы. *Садрый һәргәүе менән ҡайырҙы ярып, һалабашын ҡуптарып ала.* Н. Мусин.

**ҠАЙЫР** [2] *с. диал.* Көслө. *Йәштәр ҡайыр була.*

**ҠАЙЫРҒЫ** *и. кар.* **ҡайырғыс 1.**

**ҠАЙЫРҒЫС** *и.* **1.** Нимәне лә булһа ҡайырғанда, шаҡарғанда ҡулланылған ағас йәки тимер.

**2.** Быҫҡының тештәрен ике яҡҡа айыра торған ҡорал.

**ҠАЙЫРСАҠ** *и.* Өҫтө боҙланып туңған көрт. *Ҡар ҡайырсағы.* ■ *Ҡар ҡайырсаҡҡа әйләнһә, мал йөрөй алмай, тая, йығыла, хатта имгәнә.* Т. Морат.

**ҠАЙЫРТЫУ** *к. йөкм. кар.* **ҡайырыу.**

**ҠАЙЫРЫ** [1] *с.* Иләнгән тиренән тегелгән. *Завод егеттәре күбеһе ҡыҫҡа һырманан, башҡорттар — ҡыптыр туңлы. Бәҙерголда ғына ҡайыры тун ине.* Ғ. Хөсәйенов.

**ҠАЙЫРЫ** [2] *и. диал. кар.* **ҡайыр** [1].

**ҠАЙЫРЫЛЫУ** *к.* **1.** *төш. кар.* **ҡайырыу.** *Нурый менән Солтан ултыра. Уларҙың ҡулдары артҡа ҡайырылған.* Ш. Бикҡол.

**2.** Шаҡарылып имгәнеү, һыныу. *Мансурҙың сана ҡарамаһы ҡайырылып китте.* М. Тажи. *Ҡарлуғастың, меҫкенкәйҙең, ҡанаты ҡайырылған* (Халыҡ йырынан).

**3.** Саңҡайып боролоу, башты бороу. *Артҡа ҡайырылыу. Ҡайырылып ҡарау. Ҡайырылып ҡул болғау.* ■ *Нефедов .. минең яҡҡа ҡайырылып, толоп яғаһын ҡулы менән тотоп, һөйләшеп килде.* Ә. Вәли.

**4.** Тура барған ерҙән йүнәлештә ҡырҡа үҙгәртеү, ситкә боролоу. *Ҡире ҡайырылыу. Тыҡырыҡҡа ҡайырылыу. Уңға ҡайырылыу.* ■ *Урман араһына ҡайырылған берләм юлдан киттек.* Д. Юлтый. *Юлсыларҙың ҡайһы берҙәре хәл алырға юлдан ҡайырылды.* Я. Хамматов.

**5.** *күсм.* Ныҡ уңыу; ишелеп, емерелеп үҫеү. *Ашлыҡ ҡайырылып үҫә.* ■ *Ҡайрылып ятып бешә колхоз игене.* Ә. Вәли.

◆ **Ҡанат ҡайырылыу** *кар.* **ҡанат 1.**

**ҠАЙЫРЫЛЫШ** *с. диал. кар.* **урау** [2]. *Юл ҡайырылыш булды.*

**ҠАЙЫРЫМ** *и.* **1.** Бер салғы һелтәме менән сабылған буй. *Ҡайырым башы. Ҡайырымдың осона сығыу.*

**2.** Салғы менән сапҡанда ситкә ҡайырып, буйлатып һалып киткән өйөм. *[Хатип:] Бесәнде ҡарайта .. был ямғыр былай булһа. [Әҙһәм:] Сапҡан бесән ҡайырымда серей башланы инде.* Ж. Кейекбаев.

**3.** *диал.* Уратым.

**ҠАЙЫРЫУ** *к.* **1.** Көс менән кире яҡҡа, ситкә ҡарай тартыу; шаҡарыу. *Артҡа ҡайырыу. Ҡулды ҡайырыу. Ҡайырып бәйләү. Ҡайырып тотоу.* ■ *Ҡуҙыйкүрпәс уның [ирҙең] ҡулынан ҡылысын ҡайырып ала.* «Ҡуҙыйкүрпәс менән Маянһылыу». *[Бай — батшаға:] Бынау һанаттарың ҡулдарымды ҡайырып имгәтте* (Әкиәттән). *Егет ябалаҡтың һул ҡабырғаһын ҡайырып ала* (Әкиәттән). / Саңҡайтып көс менән бороу. *Башты артҡа ҡайырыу.*

**2.** Кирегә әйләндереп бөкләү. *[Ҡатын] шәлен ҡайырып, йөҙөн ҡапланы.* Я. Хамматов. / Ситкә һелтәп килтереп, әйләндереү. *Һалмаҡ ҡына һелтәп, ҡайырып һалам күк үләндең ҡуйы ерҙәрен.* С. Ғәбиҙуллин. / Ҡуптарып сығарырға тырышып әйләндереү. *Ишекте ҡайырыу.* ■ *Айыу ҡарағай башына менеп, солоҡ ҡапҡасын ҡайырып алып ташлай.* М. Тажи.

**3.** Күп итеп умырып, айырып алыу. *[Ғази] сөлмәктән ҡаймаҡ ҡайырып алып, икмәккә яҡты.* Ф. Иҫәнғолов. / *күсм. һөйл.* Мул итеп алыу, умырыу. *Ҡайырып аҡса алыу. Ҡайырып ашау.* ■ *[Хәмди:] Элек был ваҡытта аҡсаны ҡайыра торғайныҡ.* Ш. Янбаев.

**4.** Хәрәкәттең йүнәлешен үҙгәртеү, бороу. *Ул килгән юлдан үҙе генә белгән һуҡмаҡ менән һулғараҡ ҡайырҙы.* Ә. Вахитов. *[Айбулат:] Асатай, көтөүҙең башын ҡайыр!* Һ. Дәүләтшина. / *күсм.* Хәстәрләү, ҡайғыртыу. *Үҙ файҙаңды ҡайырыу.* ■ *«Һис юғы төрәне ватылмаһа ла бер хәл булыр ине», тип [Сафа] ҡайтыу яғын ҡайыра башланы* (Әкиәттән).

**5.** *диал. кар.* **шаҡарыу** 4. *Атты ҡайырыу. Тәртә ҡайырыу.*

◆ **Ҡайырып алғыһыҙ** бик үҫкән, уңған (игенгә, үләнгә ҡарата). *Йәүәҙе тамағында бесән ҡайырып алғыһыҙ була торғайны.* Ә. Вәли. **Сүп ҡайырмай ятыу** бер ни эшләмәй, ҡыл да ҡыбырлатмай ятыу.

**ҠАЙЫҪМАҠ** *и. диал. кар.* **ҡаҫмаҡ** 3.

**ҠАЙЫТЫУ** *к. йөкм. кар.* **ҡайыу** 1. *Аҡлы ситса күлдәгемде машинала ҡайытам* (Халыҡ йырынан).

**ҠАЙЫУ** [1] *к.* **1.** Кейем-һалымдың ситенә икенсе төҫтән таҫма баҫыу йәки ситләтеп сигеү. *Алһыу ебәк таҫма менән ҡайыным әләмдәрен* (Халыҡ йырынан).

**2.** Төрлө төҫтәге еп менән кейемгә, ҡаралдыға биҙәк тегеү; сигеү. *Йондоҙлап ҡайыу. Ҡульяулыҡ ҡайыу. Мәрйенләп ҡайыу. Әлмәләп ҡайыу.*

■ *Тәҙрә баштарына, өрлөктәргә күпертеп ҡайыған матур нәмәләр ҡуйылған.* Ф. Рәхимғолова.

**3.** Вуҫтауҙан ҡырҡып кейем-һалымға биҙәк баҫыу.

**ҠАЙЫУ** ² *и.* **1.** Кейемдең, ҡаралдының ситенә тотҡан таҫма йәки ситләтеп сиккән сигеү; ҡайма. *Әсәкәйем биргән алъябыу ун ике лә төрлө ҡайыуы* (Халыҡ йырынан).

**2.** Биҙәкләп ҡырҡып баҫылған буҫтау.

**ҠАЙЫУЛЫ** *с.* **1.** Ситләтеп таҫма баҫыулы, ситләтеп сигеүле. *Ҡайыулы туным ай иңемдә, ҡара ебәк билғау билемдә* (Халыҡ йырынан).

**2.** Биҙәкләп тегеүле; сигеүле. *Ҡыйыҡ яғалы, иҙеүе ҡайыулы аҡ күлдәк кейеп, билен суҡлы зинар менән быуған .. ине [Аллаяр].* Ф. Исәнғолов.

**3.** Биҙәкләп буҫтау баҫыулы. *Ҡайыулы сарыҡ.*

**ҠАЙЫШ** *и.* **1.** Иләнгән сей күн. // *Ҡайыш дилбегә. Ҡайыш ҡамсы. Ҡайыш ышлыя. Ҡайыш йүгән.* ■ *Зилский .. ҡамыт-сбруйҙарҙы яңы ҡайыштан һатып, дегетләп ҡуйған.* Ғ. Дәүләтшин.

**2.** Шул сей күндән тегелгән бау. *Шуны ғына көтөп торған бай Оморҙаҡты тирегә төрөп, оҙон-оҙон итеп теленгән ҡайыш менән сырмап бәйләгән дә ташлаған, ти* (Әкиәттән). / Ниҙелер тағыу, нығытыу өсөн махсус яһалған бау. *Саңғы ҡайышы.* ■ *Билкәйемде минең шул талдыра — ҡайыш баулы ҡылыс бәйләһәм* (Халыҡ йырынан). / Билгә быуыр өсөн айыллап эшләнгән махсус бау. *Һалдат ҡайышы. Һары ҡайыш.* ■ *Насрулла күн тужурҡаһын кейеп, билен ҡайыш менән быуып тора ине.* Ә. Вахитов. *Ҡаптырмалы ҡайыш менән ҡыҫып быуҙым билемде* (Халыҡ йырынан).

**3.** *тех.* Машинаның, механизмдың төрлө өлөшөн әйләндерә торған остары ҡуша тегелгән киң таҫма йәки бау. *Молотилка ҡайышы.* ■ *Тирмән геүләй. Иҫәпһеҙ күп эреле-ваҡлы ҡайыш биш этаж тулы тәгәрмәстәрҙе зырлатып әйләндерә.* И. Насыри.

♦ **Ҡайыш аҫты бушау** *шул уҡ* **билғау аҫты бушау** (*ҡар.* **билғау**). **Ҡайыш ҡолаҡ** *диал.* кейеҙ ҡолаҡ (*ҡар.* **ҡолаҡ**). **Ҡайыш һуҡҡыс** йәштәр уйыны (парлашып ултыралар, бер егет яңғыҙ була; ҡайыш һуғыусы унан, кемде алаһың, тип һорай; ул бер ҡыҙҙың исемен әйтә; ҡайыш һуғыусы ҡыҙ эргәһендәге егеттән, бирәһеңме, тип һорай; бирмәйем тиһә, теге яңғыҙ егет нисәлер ҡайыш һуғырға ҡуша, һаман бирмәһә, тағы өҫтәй; өҫтәп һуға торғас, йә егет ҡыҙын бирергә мәжбүр була, йә яңғыҙ егет икенсе ҡыҙ һайлай). *Язар: «Ҡайыш булмаһа, үҙемдең урман ҡайышы бар»,— тип, ишкән бау менән ныҡ итеп ҡыҫып билен быуып ҡуйҙы.* Б. Ишемғол. **Һырт ҡайышын алыу** (*йәки* **һыҙырыу**) сыптырыу, туҡмау.— *Бынан һуң да шарҡылдап көлгәнегеҙҙе ишетһәм, һырт ҡайышығыҙҙы алырмын.* Х. Мохтар. **Ыштанһыҙға ҡайыш бау** иң төп нәмә юҡ көйө әһәмиәтһеҙен эшләп маташҡанда әйтелә. — *Һуң, энекәш, ул ҡапҡа ыштанһыҙға ҡайыш бау булмаҫмы?* Ә. Вахитов. **Эт ҡайышы** 1) бик әрһеҙ, түҙемле йәки шыма кешегә ҡарата әйтелә. *Мин эт ҡайышына әйләнеп киттем. Сөнки тормош көн дә үҙенең ауыр һабағын уҡыта ине.* Ғ. Ғүмәр; 2) алдын бирмәгән үҙһүҙле, ныҡыш кешегә ҡарата әйтелә. *Кирегә бөткән эт ҡайышы кеше инде.*

● *Йүкәне майлаһаң да ҡайыш булмаҫ.* Мәҡәл.

**ҠАЙЫШҠАҠ** *с.* **1.** Мәйшелдәп бөгөлөп тормалы; мәйшелдәк. *Ҡайышҡаҡ таҡта.*

**2.** *диал. ҡар.* **бысый** ¹. *Ҡайышҡаҡ икмәк.*

**ҠАЙЫШЛАНДЫРЫУ** *ҡ.* Кергә ҡатырып, ҡайыш һымаҡ итеү, ҡайышҡа әйләндереү. *Күлдәк еңен ҡайышландырыу.*

**ҠАЙЫШЛАНЫУ** *ҡ.* Кергә ҡатып, ҡайыш һымаҡ булыу, ҡайышҡа әйләнеү. *Ҡайышланып ҡатыу.* ■ *Шаһыев әсе тир һеңеп, ҡайышланып бөткән пилоткаһы менән Днепрҙан һоҫоп һыу эсте.* Ғ. Әмири. / *күсм.* Бешегеп, ыжламаҫ булыу (кешегә ҡарата). *[Бабич:] .. Муллаларҙың ҡайышланып бөткән вөгәздәре кеүек итеп һәр ваҡыт бер нәмәне әүәләргә ярамай.* С. Ҡудаш.

**ҠАЙЫШЛАТЫУ** *ҡ. йөкм. ҡар.* **ҡайышлау.**

**ҠАЙЫШЛАУ** *ҡ.* Ҡайыш менән туҡмау; һыҙырыу.

**ҠАЙЫШТЫРЫУ** *ҡ.* Баҫып һығылдырыу. *Баҫманы ҡайыштырыу.*

**ҠАЙЫШЫУ** ¹ *ҡ. урт. ярҙамл. ҡар.* **ҡайыу** ¹.

**ҠАЙЫШЫУ** ² *ҡ.* **1.** Баҫымға һығылыу. *Иҙән ҡайышҡан. Түбә таҡтаһы ҡайышҡан.* ■ *Урҙа ҡайышҡан икән, һынып төшмәһен, бағана ултыртып, таятып ҡуйырға кәрәк.* Т. Морат.

**2.** Билдән артҡа яҙылыу; ҡайҡайыу. *Ҡайышып илау.* ■ *Саптар ат .. муйынын кәкрәйтеп тарта, ҡамыт тейгән ере ауыртып ҡайыша.* А. Таһиров. / *күсм.* Ҡайғырыу, әрнеү. *[Айһылыу:] Ah-ah, әллә ата-әсәмде үҙ артымдан эйәрткем килмәй тип беләһеңме минең?! Ана бит, һин үҙ туғандарың өсөн ҡалай ҡайышаһың!* З. Биишева.

**3.** *диал.* Бешеләнеү. *Ҡайышҡан һөйән.*

♦ **Эс ҡайышыу** *шул уҡ* **йән ҡайышыу** (*ҡар.* **йән**).

**ҠАҠ** ¹ *с.* **1.** Бер нәмә лә үҫмәгән; таҡыр. *Ҡаҡ тау.* // *Ҡаҡҡа ҡалдырыу. Ҡаҡҡа әйләндереү.* ■ *Малбай менән ҡаҙаҡ һуғышҡан ер, үлән генә үҫмәй, ҡаҡ ятыр* (Халыҡ йырынан). / Сәсе булмаған, ялтыр. *Хәсби апай .. ҡулындағы ике сатлы көлтә һәнәге менән Тәүкәй мулланың ҡаҡ башына берҙе ҡундырҙы.* Т. Йәнәби.

**2.** Бер ни түшәлмәгән, бер нәмә менән дә ҡапланмаған. *Ҡаҡ иҙән. Ҡаҡ таҡта. Ҡаҡ юл.* // *Ҡаҡта йоҡлау.* ■ *[Хужа:] Мәгеҙ, мендәр, юрған. Аҫтығыҙға ла түшәгеҙ. Шулайтып ҡаҡҡа яталармы ни!* Н. Мусин. *Ҡапҡан һалдым ҡаҡ боҙға, ҡама менән ҡондоҙға* (Халыҡ йырынан).

**3.** Ҡабығы әрселеп, кипкән (ағасҡа ҡарата). *Ҡаҡ ағас.* ■ *Ҡаҡ имән бағананың бер яғы юнылған да, шыма итеп йышылған.* Б. Хәсән.

**4.** Ҡояшҡа, елгә элеп киптерелгән (ит һ. б.). *Ҡаҡ балыҡ. Ҡаҡ ит.*

♦ **Ҡаҡ башына ултыртыу** *шул уҡ* **төп башына ултыртыу** (*ҡар.* **ултыртыу** 14). **Ҡаҡҡа таяныу** бер нәмәһеҙ тороп ҡалыу. **Ҡаҡ һөйәккә ҡалыу** *ҡар.* **һөйәк** ¹.

● *Уңған бисә — аҡ бәхет, уңмаған бисә — ҡаҡ бәхет.* Мәҡәл.

**ҠАҠ** ² *и.* Иҙеп таҡтаға йәйеп киптергән емеш-еләк. *Алма ҡағы. Балан ҡағы. Еләк ҡағы. Сейә*

*ҡағы. Ҡаҡ ҡойоу.* ■ *[Ғәйшә әбей:] Ғәҙелшам һалҡын алдырып, ауырыҡһынып тора әле. Ҡарағат ҡағынан сәй яһап эсерәйем тиһәм, ҡағым бөтөп киткән икән.* З. Биишева.

**ҠАҠ** [3] *окш.* Ҡаҙ тауышын белдергән һүҙ. *Ҡаҙ ҡаҡ итте лә осоп китте.*

**ҠАҠАЙТЫУ** *к.* Киреп, салҡайып ҡапайтыу. *Түште ҡаҡайтыу.* ■ *Ҡарт, башын ҡаҡайтып, .. улына ҡарап алды.* В. Исхаҡов.

**ҠАҠАЙЫУ** *к.* Башты күтәреп, түште киреү. *Ҡаҡайып тороу. Ҡаҡайып ултырыу.* ■ *[Өркөп ҡасҡан ат] йөҙ таяҡ самаһы ерҙә Әхмәткә ҡарап ҡаҡайып тора ине.* И. Көҫәпҡол.

**ҠАҠАҠ** *и. бал.* Ҡаҙ.

**ҠАҠАШ** *с. һөйл.* Керенә ҡатҡан; бысраҡ. *Ҡаҡаш кеше. Өҫтө-башы ҡаҡаш.*

**ҠАҠАШТЫРЫУ** *к. һөйл.* Ныҡ керләндереү. *Күлдәкте ҡаҡаштырыу.*

**ҠАҠАШЫУ** *к.* Бик ныҡ керләнеү, бысраҡҡа ҡатыу. *Сорокин малайҙың ҡаҡашып бөткән бит--кулдарына, кейем тип әйтерлеге лә ҡалмаған пинжәк-салбарына ҡарап, түҙемлегенә хайран ҡалды.* Х. Мохтар.

**ҠАҠ-ҠАҠ, ҡаҡ та ҡаҡ** *окш.* Ҡат-ҡат ҡаҡ [3] иткән тауыш. *Ҡаҡ-ҡаҡ итеү. Ҡаҡ-ҡаҡ ҡысҡырыу.*

**ҠАҠҠЫ** [1] *и.* Киндерҙе, етенде ҡаҡҡылап--һуҡҡылап талҡышынан таҙарта торған ялпаҡ таяҡ; тәрәпләүес.

**ҠАҠҠЫ** [2] *и.* Ҡағып-һуғып ҡыйырһытҡан мөнәсәбәт. *[Тайба әбей:] Ауырлыҡта, ҡаҡҡыла үҫкән балала әҙерәк ҡырыҫлыҡ, томһалыҡ була инде ул.* З. Биишева.

**ҠАҠҠЫЛАУ** *к.* Ваҡыт-ваҡыт ҡағыу. *Бесәнде ҡаҡҡылау. Теҙгенде ҡаҡҡылау.*

**ҠАҠҠЫС** *и.* Кейемде, ҡаралдыны ҡағып таҙарта торған нәмә. *Ҡаҡҡыс менән балаҫ ҡағыу.*

**ҠАҠЛАН** *и.* Ел ҡағып торған ҡалҡыулыҡ. // *Ҡаҡлан ер.* ■ *Әле булһа ул юл бар ҡая бите ҡаҡланда, шыр урмандар эсендә.* «Юлай менән Салауат».

**ҠАҠЛАНЫУ** *к.* **1.** *төш. ҡар.* **ҡаҡлау** [1]. *Ҡаҡланған ҡаҙ.*

**2.** Ҡояшта, елдә кибеү (иткә, балыҡҡа һ. б. ҡарата). *Ҡаҡланып торған ит.* ■ *Тоҙлаған ҡаҙҙар ҡаҡланып кибә булыр ҡыйыҡтарҙа.* Т. Арслан.

**3.** *күсм.* Эҫелә йонсоу. *[Гөлгәйшә:] Өфөлә асфальтта ҡаҡланып йәй үткәргәнсә, бында саф һауа еҫкәһен, тигән булам.* Ш. Янбаев.

**ҠАҠЛАС** *с.* Ҡаҡ һөйәк, ҡоро һөйәк; итһеҙ. *Ҡаҡлас оҙон бармаҡлы.*

**ҠАҠЛАТЫУ** *к. йөкм. ҡар.* **ҡаҡлау** [1] 1.

**ҠАҠЛАУ** [1] *к.* **1.** Ҡояшҡа, елгә элеп киптереү (итте, балыҡты һ. б.). *Ит ҡаҡлау. Ҡаҡлаған ҡаҙы.* ■ *Ике ҡаҙҙы әсәй ҡаҡлап элде, сыҡҡан көндө йәнә бәпкәләр.* М. Басыров.

**2.** *күсм.* Бикле көйө ас тотоп, йонсотоу (мал--тыуарға ҡарата). *Һыйырҙарҙы бер үк урында ҡаҡлап тотмаҫ өсөн, йәйләүҙәр .. күсереп йөрөтөлә.* Х. Назаров.

**ҠАҠЛАУ** [2] *и. диал.* Ҡаҡлан.

**ҠАҠЛЫ** *и. диал. ҡар.* **белекле** 2.

**ҠАҠЛЫҒЫП-ҺУҠЛЫҒЫУ** (ҡаҡлығып-һуҡлыҡ≠) *к.* Бер ары, бер бире бәрелеү. *[Муйыл] ишеккә ҡаҡлыға-һуҡлыға Хәмдиәләр өйөнә барып инде.* Һ. Дәүләтшина.

**ҠАҠЛЫҒЫУ** (ҡаҡлыҡ≠) *к.* **1.** Ҙур бер тиҙлек менән килеп ҡаты нәмәгә һуҡлығыу, һуғылып туҡтау. *Таш ҡаҡлыҡһын түшеңдән — киләсәктең аҡ юлында, халыҡтың хаҡ эшендә.* Р. Бикбаев. / *күсм.* Тиҙлек менән килгән ерҙән ныҡлы тотҡарлыҡҡа осрап туҡтау. *[Аҡтар] ҡыуаҡлыҡ ышығына тупланып әҙер торған ҡыҙыл партизандар көсөнә ҡаҡлыҡты.* Һ. Дәүләтшина.

**2.** Ҡаты нәмәгә һуғылып, кире ҡағылыу; ҡаҡсыу. *Ҡаҡлығып осоу.* ■ *Егеттең ҡылысы дейеүҙең һөйәгенән ҡаҡлығып, үҙенең беләгенә тейә* (Әкиәттән). / Ҡағылып кире яңғырау. *Ҡарауыҙҙың тауышы ҡаяға ҡаҡлығып, тын урман өҫтөн яңғырата.* С. Кулибай.

**ҠАҠЛЫҒЫШЫУ** *к. урт. ҡар.* **ҡаҡлығыу.**

**ҠАҠЛЫҠТЫРЫУ** *к.* Ҡаты нәмә менән һуғып, кире ырғытыу; ҡаҡсытыу. *Тупты ҡаҡлыҡтырыу.* ■ *Алпамыша осоп килгән ташты ҡулы менән ҡаҡлыҡтырып, кире ебәрә.* «Алпамыша».

**ҠАҠМА** *и.* **1.** (*йәки* **ҡаҡма туп**) Балалар уйыны (уҙаҡлашып бүленәләр; бер төркөм тупты бирә, икенсеһе һуға; һуҡҡан кеше майҙан арьяғындағы сиккә йүгерә, шул арала икенсе төркөмдәгеләр тупты тота һалып уға бәрә, тейһә, ул яна).

**2.** Шул уйында тупты һуғып ебәрә торған таяҡ.

**ҠАҠМАЛАУ** *к. диал.* Ҡаҡҡылау.

**ҠАҠМАШ** *с. диал.* Ҡаҡаш.

**ҠАҠМАШЫУ** *к. диал.* Ҡаҡашыу.

**ҠАҠСА** *с.* Ит ҡунмаған,ябыҡ. *Ҡаҡса кеше. Ҡаҡса кәүҙә. Ҡаҡса яңаҡлы.* ■ *Зөләйхаға күҙ һалам. Ит ҡунып, кәүҙәгә тулыланып киткән. Элекке ҡаҡса бите түңәрәкләнә, ҡыр танауы йомролана төшкән кеүек.* Н. Мусин.

**ҠАҠСАЛАНЫУ** *к.* Ҡаҡсаға әйләнеү. *Күпме йоҡоһоҙ төн бергә үтте, ҡаҡсаланды тәнем ите лә.* Я. Ҡолмой.

**ҠАҠСЫЛЫУ** *к. ҡар.* **ҡаҡсыу** [1].

**ҠАҠСЫР** *и.* **1.** Һауыт-һабаны элеп киптерә торған саталы ҡаҙыҡ. *Ҡаҡсырға күнәк элеү.*

**2.** Көлтә һөйәп киптереү өсөн ерҙән ҡыйыҡлап эшләнгән урын; сәсә.

**3.** *диал.* Ылаш.

**ҠАҠСЫРҒАҠ** *и. диал. ҡар.* **сәсә** [2].

**ҠАҠСЫТЫУ** *к.* Һуғып кире ҡағылдырыу. *Тупты ҡаҡсытыу.*

**ҠАҠСЫУ** [1] *к.* Һуғылып кире ҡағылыу. *Туп стенанан ҡаҡсыны.* ■ *Ук ялбыр имән олонона барып төртөлдө лә, ҡаҡсып ергә төштө.* Ғ. Ибраһимов.

**ҠАҠСЫУ** [2] *к.* Елгә ҡағылып, елләп кибеү. *Ҡаҡсырға етен түшәү.*

**ҠАҠТҮШ** *и. диал. ҡар.* **сәксәк** 1.

**ҠАҠТЫРЫУ** *к. йөкм. ҡар.* **ҡағыу** [1]. *Сөй ҡаҡтырыу.*

**ҠАҠҺЫҘ** *с. диал. ҡар.* **белекһеҙ** 2.

**ҠАҠҺЫҠ** *с.* Ҡаҡһыған, еҫләнгән. *Ҡаҡһыҡ ит.*

**ҠАҠҺЫУ** [1] *к.* Иҫкереп, күгәреп боҙолоу, еҫләнеү. *Ҡаҡһыған бал. Ҡорот ҡаҡһыған. Эркет ҡаҡһыған.* ■ *Иҫкергән һабала ҡымыҙ күпсей,*

*каҡһыған тәм сығып, боҙола.* М. Ғөбәйҙуллин.

**ҠАҠҺЫУ** [2] *с.* Күк тәме эйткән, иҫкергән (аш-һыуға ҡарата). *Каҡһыу эркет.*

**ҠАҠШАЛЫУ** *к. диал. кар.* **ҡаҡшау** [1].

**ҠАҠШАМАҪ** *с.* Емерелмәҫ, ныҡлы. *СССР халыҡтарының ҡаҡшамаҫ дуҫлығы.* ■ *Башҡорт АССР-ының социаль нигеҙен эшсе, крәҫтиән һәм интеллигенцияның ҡаҡшамаҫ союзы тәшкил итә.* Башҡорт АССР-ының Конституцияһы, 1984.

**ҠАҠШАР** *и. диал. кар.* **сәсә** [2].

**ҠАҠШАТТЫРЫУ** *к. йөкм. кар.* **ҡаҡшатыу.**

**ҠАҠШАТЫУ** *к.* **1.** Бушаҡ, тотанаҡһыҙ хәлгә килтереү; бушатыу. *Арбаны ҡаҡшатыу.*

**2.** *күсм.* Эске тотанағын, ныҡлығын боҙоу. *Дуҫлыҡты ҡаҡшатыу.* ■ *Кем ҡаҡшатыр уның ғорур тынысլығын.* З. Биишева.

**3.** *күсм.* Төрлө ыҙа, ауыр кисереш, мохтажлыҡ һ. б. дусар итеп йонсотоу, көс-хәлде алыу. *Ауыр эш ҡаҡшатты. Юл йөрөү ҡаҡшатты. Һуғыш ҡасафаты халыҡты ныҡ ҡаҡшатты.* / Ныҡлығын бөтөрөү, зыян килтереү (һаулыҡҡа ҡарата). *Сәләмәтлекте ҡаҡшатыу.* ■ *Әллә ни саҡлы .. ғазап нервыларҙы ҡаҡшатты.* А. Карнай.

**ҠАҠШАУ** [1] *к.* **1.** Тотанағы бөтөп, һелкенеп тороу, бушау. *Арба ҡаҡшаған. Ҡаҡшаған теш.* ■ *Әхмәҙулла бабай ҡаҡшаған ишекте сыңғаһынан һурып алды ла йүнәтергә тотондо.* Ә. Вахитов.

**2.** *күсм.* Эске тотанағын, ныҡлығын юғалтыу, боҙолоу. *Дуҫлыҡ ҡаҡшаны. Ышаныс ҡаҡшаны.* ■ *Иҙел кире аҡмағандай, бирғән антым минең ҡаҡшамаҫ.* Ғ. Әмири.

**3.** *күсм.* Төрлө ыҙа, ауыр кисереш, мохтажлыҡ һ. б. ныҡ йонсоу, арып хәлһеҙләнеү. *Ауыр эштән ҡаҡшау. Һалымдан ҡаҡшау.* ■ *[Тимергәле:] Ҡайғы баҫты. Шуның менән бик ныҡ ҡаҡшаныҡ.* Һ. Дәүләтшина. *Түрә лә генә килә, түрә китә, тимен, килгән түрәләрҙән ҡаҡшаныҡ* (Халыҡ йырынан). / Ныҡлығы бөтөү, насарланыу (һаулыҡҡа ҡарата). *Нервы ҡаҡшаған. Сәләмәтлек ҡаҡшаған.* ■ *Талҡанбайҙың хәтер ҡаҡшаны, онотоусан була башланы.* С. Ҡудаш. *Таңдыса арып, арманһыҙ булды, быуындары ҡаҡшаны.* «Ҡуңыр боға».

**ҠАҠШАУ** [2] *к. диал. кар.* **тылҡыу.**

**ҠАҠШАУ** [3] *с.* Йонсоған, ҡаҡшаған (кешегә ҡарата). *Саҡ-саҡ йәнен аҫрарҙай үҙе ҡаҡшау, ябыҡтыр.* «Урал батыр».

**ҠАҠЫ** *и.* Әүернә сәскәләләр ғаиләһенә ҡараған йөнтәҫ һабаҡлы, киртләс ҡауырһын япраҡлы, һары сәскәле, эскелт тәмле ашай торған үҫемлек. *Яҙ көнөндә ҡырҙа йөрөгәндә, исмаһам, ҡарын асып китһә, ҡаҡы, көпшә, кәзә һаҡалы, ҡымыҙлыҡ кеүек үҫемлектәр ашап, тамаҡ ялғап ебәреп була ине ...* М. Ғафури. **Эт ҡаҡыһы** йорт араһында үҫкән ҡаты йөнтәҫ һабаҡлы, тарбаҡ ботаҡлы, һары сәскәле, ваҡ ҡуҙаҡлы бейек ҡый үләне.

**ҠАҠЫЛАНЫУ** *к. диал.* Ҡаҡашыу.

**ҠАҠЫЛДАҠ** *с.* Гел ҡаҡылдап йөрөүсән. *Ҡаҡылдаҡ ҡаҙ.*

**ҠАҠЫЛДАТЫУ** *к.* Ҡаҡылдарға мәжбүр итеү. *Ҡаҙҙы ҡаҡылдатыу.*

**ҠАҠЫЛДАУ** *к.* **1.** Ҡаҡ-ҡаҡ иткән тауыш биреү (ҡаҙға ҡарата). *Ҡаҡылдап ҡысҡырыу.*

**2.** *диал. кар.* **ҡаңғылдау 2.**

● *Һауалағы торна торҡолдағанда, ерҙәге ҡаҙ ҡаҡылдай.* Мәҡәл.

**ҠАҠЫЛДАШЫУ** *к. урт. кар.* **ҡаҡылдау** 1.

**ҠАҠЫРЫҠ** *и.* Тамаҡтан сығарған лайлалы эрен. *[Ләйлә:] .. Тамағында торған ҡаҡырығын сығарып ташларға булдыра алһа, үҙендә бер рәхәтлек һиҙә ине.* М. Ғафури.

**ҠАҠЫРЫНЫП-ТӨКӨРӨНӨҮ** *к.* Бер ҡаҡырып, бер төкөрөү; төкөргөләү. *Соланда тәмәке тартып, ҡаҡырып-төкөрөп бөтәләр.*

**ҠАҠЫРЫУ** *к.* Тамаҡ ҡырып, ҡуйы лайла сығарыу. *Ҡайныһы, мин шәп кеше, тип яр башынан аҡыра; ҡайныһы ҡыҳ-ҡыҳ итеп, аҙбар башынан ҡаҡыра.* Ш. Бабич.

**ҠАЛА** [1] *[ғәр.] и.* **1.** Промышленность һәм культура үҙәге булған күп халыҡлы урын. *Ҙур ҡала. Иҫке ҡала. Яңы ҡала. Баш ҡала. Ҡала баҡсаһы. Ҡала халҡы.* ■ *Өфө ҡалаһы Ҡариҙел йылғаһының Ағиҙелгә ҡойған урынында, Өфө тауы башында ултыра.* Ж. Кейекбаев. *Таҙ бер ҡалаға килеп сыҡты, ти. Был ҡала бер ҡарт батшаның баш ҡалаһы икән, ти* (Әкиәттән). **Ҡала яны хужалығы** ҡала халҡын аҙыҡ менән тәьмин итеү маҡсатында, ҡалаға яҡын ерҙә ойошторолған хужалыҡ. *Ҡала яны хужалығында өмә булды. Әҙ сыҡҡандар. Трестан, сыр-сыу булып, гел ҡатын-ҡыҙ килгән.* К. Мәргән.

**2.** *иҫк. кар.* **кәлғә.**

● *Яңғыҙ тирәк өй булмаҫ, яңғыҙ таш ҡала булмаҫ.* Мәҡәл.

**ҠАЛА** [2] *бәйл.* Сығанаҡ килештәге һүҙҙәр менән нимәнеңдер артынса килгән урынды белдерә. *Был байлыҡҡа ни атаһынан ҡала Имай баш бит инде.* Һ. Дәүләтшина.

**ҠАЛА-АРА** *с.* Ҡалалар араһындағы, ҡала менән ҡала бәйләнешендәге. *Ҡала-ара автобус. Ҡала-ара телефон станцияһы.*

**ҠАЛАБАТ** *с. диал.* Иҫәүән.

**ҠАЛАЙ** [1] *и.* **1.** Табаҡлы йоҡа тимер. *Аҡ ҡалай. Ҡалай һауыт. Ҡалай башлы йорт.* ■ *Ҡарттың өй ҡыйығы зәңгәр ҡалай. Тәҙрә ҡапҡастары биҙәрле.* С. Кулибай.

**2.** Шул тимерҙән эшләнгән бәләкәй һауыт. *Сәй ҡалайы.*

**ҠАЛАЙ** [2] *а.* **1.** *һор.* Эш-хәрәкәттең нисек башҡарылыуын һорауҙы белдерә.— *Был мәсьәләне беҙ ҡалай хәл итербеҙ икән һуң?* С. Агиш. *[Янһары:] Бар менән юҡты ҡалай итеп табайым икән?* (Әкиәттән). / Ниҙеңдер хәле, кимәл-дәрәжәһе хаҡында һорауҙы белдерә; ни кимәлдә, ниндәй. *Баҙарҙа иттең хаҡы ҡалай?*

**2.** *билд.* Билдәле бер сифаттың, эш-хәрәкәт йәки хәлдең юғары дәрәжәһенә һоҡланғанда, ғәжәпләнгәндә әйтелә; ниндәй. *Ҡалай ауыр. Ҡалай килешә. Ҡалай ҡыҙыҡ. Ҡалай матур.* ■ — *Ҡалай төлкөләнеп алдыңдан-артыңдан әйләнеп йөрөй.* Ғ. Дәүләтшин. *Минең әүәлге хаттарымды ала алмауың ҡалай йәл, бик йәл.* Р. Ниғмәти. *Ҡалай тотлоғоп та торманы, сатнатып уҡыны ла бирҙе.* М. Кәрим.

**3.** (*йәки* **ҡалай итеп**) *р. мәғ.* Эш-хәрәкәттең билдәләнмәгән башҡарылыу рәүешен белдерә; ни

рәүешле, нисек. *[Үмәр:] Мәһәргә алған аҡса ғына теүәл торһа ла, мин ҡалай һөйләшергә белер инем.* Һ. Дәүләтшина. *Батша үйға ҡала, ҡалай итеп бынан ҡотолорға юл эҙләй* (Әкиәттән).

**4.** (*йәки* **ҡалай итеп**) *р. мәғ.* Эш-хәрәкәттең билдәләнмәгән башҡарылыу эмәлен, мөмкинлеген белдерә; ни хәл итеп, ни эмәл менән. *Ҡалай итеп [Зөлхизә] үҙ бәхетенә үҙе ҡул һелтәһен?* З. Биишева.

**5.** *р. мәғ.* Эш-хәрәкәттең билдәләнмәгән йүнәлешен белдерә; ни йүнәлештә, ҡайҙа. *[Тимергәле:] Эштең ҡалай барғанын төшөнөп ултыраһыҙ ғуй.* Һ. Дәүләтшина.

♦ **Бер ҡалай ҙа** һис бер эмәл менән; һис нисек. *Ул бер ҡалай ҙа төшөндөрә алмағас, ҡул һелтәп, өйҙән сығып китте.* Б. Бикбай. **Ҡалай ҙа** *йәки* **ҡалай [ғына] булһа ла, ҡалай ҙа булһа** ниндәйҙер эмәл менән; нисек тә. *Ҡалай ғына булһа ла миңә ҡайтырға кәрәк.* Д. Юлтый. **Ҡалай етте шулай** арлы-бирле, теләһә ҡалай. *Эске кейемдәремде ҡалай етте шулай элгеләп бөткәс, ҡабаланып барып шинелгә йәбештем.* Ғ. Дәүләтшин. **Ҡалай итәһең** сараһыҙлыҡ белдергәндә әйтелә. *Мөхәббәт һинең күҙеңде пәрҙәләгән шул, ҡалай итәһең.* З. Биишева. **Теләһә ҡалай** арлы-бирле, теләһә нисек; ҡалай етте шулай. *Теләһә ҡалай эшләү ярамай.*

**ҠАЛАЙЛАНЫУ** *ҡ. төш. ҡар.* **ҡалайлау.** *Ҡалайланған һандыҡ.*

**ҠАЛАЙЛАТЫУ** *ҡ. йөкм. ҡар.* **ҡалайлау.** *Өй түбәһен ҡалайлатыу.*

**ҠАЛАЙЛАУ** *ҡ.* Ҡалай менән ябыу йәки көпләү. *Ишекте ҡалайлау. Түбәне ҡалайлау.* / Ҡалай менән семәрләү. *Һандыҡты ҡалайлау.*

**ҠАЛАЙЛЫ** *с.* Ҡалай ҡағылған. *Ҡалайлы һандыҡ.*

**ҠАЛАЙСЫ** *и.* Ҡалай менән эш итеүсе, ҡалай менән өй башы ябыусы. *Төҙөлөштә ҡалайсылар етешмәй.*

**ҠАЛАЙТЫУ** *ҡ. ҡыҫҡ. ф. һөйл.* Ҡалай итеү, нисек итеү. *[Зиннәт:] Мин ҡалайтайым инде, ағай? Мин һораштым, эҙләнем...* Я. Хамматов.

**ҠАЛАҠ** *и.* **1.** Һоҫоп ашауға йәтешләп, башын соҡор итеп эшләгән ҡорал. *Ағас ҡалаҡ. Көмөш ҡалаҡ. Тимер ҡалаҡ. Аш ҡалағы.* / Шул ҡорал менән билдәләнгән үлсәү самаһы. *Бер ҡалаҡ тоҙ. Ике ҡалаҡ һурпа.* **Ҡалаҡ ҡуйғыс** йыуылған ҡалаҡтарҙы теҙеп ҡыҫтырып ҡуя торған урын; ҡашалдырыҡ.

**2.** Башы йоҡа, ялпаҡ итеп эшләнеп, төрлө маҡсат (болғатыу, һыҙырыу, һылау һ. б.) өсөн ҡулланыла торған һәр төрлө ҡорал. *Мүк ҡалағы. Ҡамыр ҡалағы. Ҡоймаҡ ҡалағы. Аяҡ кейер өсөн ҡалаҡ.* **Ау ҡалағы** ау бәйләгәндә епте урап, күҙ яһай торған яҫы, ялпаҡ ҡорал. **Ҡорт ҡалағы** һырыған ҡортто һоҫоп моҙғаға йыя торған туҙ ҡалаҡ.

**3.** Балаҫ, ҡап һуҡҡанда арҡауҙы ҡаға торған ялпаҡ таяҡ рәүешендәге ҡорал.

**4.** Пароходтың, һыу тирмәненең һ. б. тәгәрмәсенең ишеү таҡтаһы. / Ишкәктең яҫы башы.

♦ **[Бер] ҡалаҡ ҡан ҡалғансы** *ҡар.* **ҡан** [1]. **Ҡалаҡ башындай** *ҡар.* **баш** 1. **Ҡалаҡҡа** (*йәки* **бер ҡалаҡ һыуға**) **һалып йоторлоҡ** иҫ китерлек сибәр. *Ынйыҡай ҙа менән Юлдыҡайҙы ҡалаҡтарға һалып йоторлоҡ* (Халыҡ йырынан). **Ҡалаҡ һөйәге** *ҡар.* **һөйәк** [1] 1. **Ҡалаҡ һуғыу** һырты менән ҡара-ҡаршы ҡуйып бармаҡ араһына ҡыҫтырған ике ағас ҡалаҡты тубыҡҡа һуғып көй сығарыу. **Салғы ҡалағы** *диал.* яныуыс.

● *Ҡатыҡ эскән ҡотолған, ҡалаҡ ялаған тотолған.* Мәҡәл. *Ямандан ярты ҡалаҡ аш ҡалыр.* Мәҡәл.

**ҠАЛАҠАЙ** *р. диал. ҡар.* **ләл-ләл** 1.

**ҠАЛАҠБАШ** *и.* Яҫы үткер уҡ башағы. *Ҡарагөлөмбәт .. ҡалаҡбаш менән Бабсаҡтың билен өҙә ата.* «Бабсаҡ менән Күсәк».

**ҠАЛАҠЛАУ** *ҡ.* Ҡалаҡ-ҡалаҡ итеп һоҫоу. *[Ҡоҙағый:] «Минең балам бал ярата ул», тип, ҡалаҡлай ҙа ейәненә ҡаптыра, ти* (Әкиәттән).

● *Ҡалаҡлап йыйғанды табаҡлап түкмә.* Әйтем.

**ҠАЛАНСА** [*рус.* < *төрк.* < *ғәр.*] *и.* Тирә-яҡты менеп күҙәтә торған бейек ҡоролма. *Ут ҡалансаһы.*

**ҠАЛАС** *и.* **1.** Күпереп торған ап-аҡ икмәк. *Иртә менән лавканың аҡһыл күк төҫтәге кәштәләре ҡалас менән тула.* Ғ. Ғүмәр.

**2.** *диал.* Керәндил. *Хәмдиә лавканан ике оҙон бау ҡалас алып, муйынына тағып ҡайтып килә.* Һ. Дәүләтшина.

♦ **Нужа ҡаласы** донъя аҙабы. **Нужа ҡаласы ашау** аҙап күреү. *Их замана, ай-һай хәтәр замана, нужа ҡаластары ашаттың.* А. Игебаев.

● *Алйотҡа алты ҡалас биш тин.* Әйтем.

**ҠАЛАСЫҠ** *и.* **1.** Махсуслаштырылған бәләкәй торлаҡтар төркөмө. *Туристар ҡаласығы. Хәрби ҡаласыҡ.*

**2.** Боронғо ҡала урыны.

**ҠАЛАТАУ** *и.* Башында боронғо ҡала ҡоролған тау.

**ҠАЛА-ТИРӘ** *с.* Ҡаланың яҡын-тирәһенә йөрөгән (транспортҡа ҡарата). *Ҡала-тирә автобус. Ҡала-тирә поезд.*

**ҠАЛАУ** [1] *ҡ. һир.* **1.** Берәй тәртип менән өйөү. *[Бибекәй] тиҙәк-сытырҙарҙы усаҡҡа ҡалай ҙа мөрйә асырға Айбикәне көтә.* Һ. Дәүләтшина.

**2.** Өҫтө-өҫтөнә һалып төҙөү, ҡороу. *Кирбес ҡалап усаҡ сығарыу. Ҡойма ҡалау.*

**3.** Ышыҡ яһау, ышыҡлау. *Утты елдән ҡалау.*

**ҠАЛАУ** [2] *и.* Ҡоймалап өйөлгән нәмәләр. *Ҡалау ҡуйыу. Ҡалау һалыу.*

**ҠАЛАУЛАУ** *ҡ.* Ҡалау [2] яһау. *Кәберҙәрҙең күберәге элек таш менән ҡалаулап эшләнгән.*

**ҠАЛБЫР** *с.* Өтәләнеп, еренә еткермәй эшләүсән. *Ҡалбыр кеше.*

● *Ҡалбырҙың эше ялбыр.* Әйтем.

**ҠАЛБЫРАУ** *ҡ. ҡар.* **ҡалбырғау.**

**ҠАЛБЫРҒАТЫУ** *ҡ.* Ҡурҡыу һалып ҡаушатыу, аптырандырыу. *Баланы ҡалбырғатыу.*

**ҠАЛБЫРҒАУ** *ҡ.* Ҡурҡҡандан йәки ҡаушағандан тейешенсә эш итә алмай аптыраныу.

**ҠАЛБЫР-ҠАЛБЫР** *оҡш.* Ниҙеңдер тейер-теймәҫтән һелкенеп, ҡалтырап барғанын белдергән һүҙ. *Ҡалбыр-ҡалбыр итеү. Япраҡтар ҡалбыр-ҡалбыр һелкенә.*

**ҠАЛБЫР-ҠОЛБОР** *оҡш.* Өтәләнеп, аптыранған һымаҡ ҡылыҡты белдергән һүҙ. *Ҡалбыр-ҡолбор итеү.*

**ҠАЛБЫРЛАТЫУ** *к.* Ҡалбыр-ҡалбыр иттереү; һелкендереү.

**ҠАЛБЫРЛАУ** *к.* **1.** Ҡалбыр-ҡалбыр итеү; һелкенеү. *Ҡалбырлап торған өҫтәл.*

**2.** Өтәләнеп, ҡалбыр-ҡолбор ҡыланыу; өлтөрәү. *Ҡалбырлап эшләү.*

**ҠАЛҒА** *и. ҡар.* **ҡәлғә.**

**ҠАЛҒАЙ** *и. иҫк.* Түрәнең, рәсми хөкөм эйәһенең урындағы вәкиле. *[Суртмаҡ:] Олуғ ханыбыҙ мине ҡалғай яһап ҡуяҫаҡ. Белдеңме?* К. Мәргән.

**ҠАЛ-ҒАЛ** *р. диал. ҡар.* **ләл-ләл 1.** *Ҡал-ғал тороу. Ҡал-ғал баҫыу.*

**ҠАЛҒАН** *с.* **1.** Бөтән, башҡа, икенсе. *[Таҙ:] Батша ҡыҙы ошо яулыҡтың үҙендәге яртыһын сығарып, ҡалған яртыһын һорар* (Әкиәттән). *Бишеһенән береһен һайла, ҡалған дүртен йөрөтмә* (Халыҡ йырынан). / *эйл. ф. и. мәғ. Ҡалғанын алыу. Ҡалғаны етәр.*

**2.** Бынан һуңғы, артабанғы, киләсәктәге. *Ҡалған ваҡыт. Ҡалған юл.* ■ *Үткән генә ғүмер зая үтте, ҡалған ғүмер рәхәт үҙһа ине* (Халыҡ йырынан).

**3.** Тотонғандан, файҙаланғандан артҡан; ҡалдыҡ. *Айбулат Мәғфүрәнең .. ҡалған ашын йылытып ашап ят[ты].* Һ. Дәүләтшина.

**ҠАЛҒАН-БОҪҠАН** *с.* Әҙ-мәҙ ҡалған; ҡалдыҡ-боҫтоҡ. *Шул көндө үк Әминбәктең атаһы ҡалған-боҫҡан мал-тыуарын, йорт-ерен һатҡан да, .. ауылдан сығып та киткән* (Әкиәттән).

**ҠАЛҒАН-ҠОТҠАН** *с. диал.* Ҡалған-боҫҡан.

**ҠАЛҒЫУ** *к.* Ултырған ерҙән йоҡлап китеү, ойоу. *Ҡалғып ултырыу.* ■ *Йоҡас ҡарт тағы ҡалғып, башы, быуынһыҙ, нәмә кеүек, бәлк итеп төшөп китте.* Ғ. Дәүләтшин.

**ҠАЛДАУ** [1] *с.* Иген сәсмәй ташланған (ергә ҡарата). *Ҡалдауын да, сиҙәмен дә ҡалдырманыҡ, теге тарайған баҫыуҙарҙ әллә ҡайҙарға тиклем киңәйтеп ебәрҙек.* И. Ғиззәтуллин.

**ҠАЛДАУ** [2] *с.* Тәненә ит ҡунмай, ябыҡ һымаҡ күренә торған (малға ҡарата). *Ҡалдау ат. Ҡалдау һыйыр.*

**ҠАЛДЫҠ** *и.* **1.** Бер нәмәнең тотонғандан, файҙаланғандан ҡалған өлөшө. *Аш-һыу ҡалдыҡтарына йыйылған ҡара себендәр .., осло морондарын зилскийҙең һимеҙ тиреһенә батырып, һимеҙ ҡанын эсәләр.* Ғ. Дәүләтшин.

**2.** Ниҙеңдер эшкәрткәндә сүпкә сыҡҡан өлөшө. *Промышленность ҡалдыҡтары. Металл ҡалдыҡтары. // Ҡалдыҡ газ.*

**3.** Ҡыйраған, таралған, бөткән нәмәнең һаҡланып ҡалған өлөшө йәки сифаты. *Кәртә-ҡура ҡалдығы.* ■ *Туҡмалған дивизияның ҡалдығы, ярты мең самаһы кеше, .. көнсығышҡа ҡарай юл тотто.* Д. Исламов.

**4.** *мат.* Бер һанды икенсе һанға бүлгәндә бүленмәй ҡалған өлөш. *Туғыҙҙы икегә бүлгәндә ҡалдыҡ сыға.*

♦ **Әҙәм ҡалдығы** *ҡар.* **әҙәм.**

**ҠАЛДЫҠ-БОҪТОҠ** *с. йыйн.* Әҙ-мәҙ ҡалған нәмә; ҡалған-боҫҡан. *Зариф менән беҙ ҡалдыҡ-боҫтоҡ икмәк һыныҡтары ғына ҡапҡылағайныҡ. Билбау аҫты бик бушаны.* С. Кулибай. // *Ашауҙа ҡайғы юҡ. Беҙҙең бит хужа бай. Ҡалдығын-боҫтоғон ул беҙҙән ҡыҙғанмай.* Ғ. Байбурин.

**ҠАЛДЫРЫЛЫУ** *к. төш. ҡар.* **ҡалдырыу.** *Һөрмәй ҡалдырылған ер.*

**ҠАЛДЫРЫУ** *к.* **1.** Хәрәкәт иткәндә тиҙлектә еткермәү. *Артҡа ҡалдырыу.* ■ *Йүгерек теге эбейҙе уҙып, сирек көнгә артта ҡалдырып, майҙанға килеп ингән* (Әкиәттән). *Йылҡыһы аттарҙы ҡыуа, өйөр артынан ҡалдырмай.* Б. Бикбай.

**2.** Үҙең менән бергә алмау, ташлау. *Баланы өйҙә ҡалдырыу.* ■ *Күк атымдың һыйпап ялдарын йәшел үләнлектә ҡалдырҙым.* Ғ. Хәйри. *Өс улын ҡалдырып, бабай үлеп киткән, ти* (Әкиәттән).

**3.** Киткәндә йәки үлгәндә кемдер ҡарамағына, файҙаһына тәғәйенләү. *Аҡса ҡалдырыу. Йорт ҡалдырыу. Мираҫ ҡалдырыу.* / Үҙеңдән һуң ниҙелер һаҡлау, йәшәтеү. *Дан ҡалдырыу. Исем ҡалдырыу. Тоҡом ҡалдырыу.* / Ниҙеңдер килеп сығыуына сәбәп булыу. *Тәьҫир ҡалдырыу.* ■ *Йылғалар ҙа ырып эҙ ҡалдыра, тик беҙ һыҙған эҙҙәр икенсе.* А. Игебаев.

**4.** Ниндәйҙер урынға ҡуйыу, ҡайҙалыр урынлаштырыу. *Аулаҡта ҡалдырыу.* ■ *Күмәкләп эйләнеп, уртала берәүҙе ҡалдырып, йырлашалар.* С. Агиш.

**5.** Ниндәйҙер хәлгә дусар итеү, берәй хәлгә төшөрөү. *Белемһеҙ ҡалдырыу. Ҡараућыҙ ҡалдырыу. Тол ҡалдырыу. Ялангас ҡалдарыу.* ■ *Ҡола атым юғалдың, мине йәйәү ҡалдырҙың* (Халыҡ йырынан).

**6.** Ебәрмәй, билдәле бер урында туҡтатыу. *Әйткәс, тыңлайым тип барғайным, аш ашарға ла ҡалдырҙылар.* Һ. Дәүләтшина. *Батша Өйрәнсекте үҙ янына ҡалдырған.* З. Биишева. / Кластан класҡа күсермәү. *Икенсе йылға ҡалдырыу.*

**7.** Нисек булған, шул көйө тотоу, үҙ хәленсә ҡуйыу. *Асыҡ ҡалдырыу. Язаһыҙ ҡалдырыу.* ■ *Атайымды, зинһар, үлтермә. Минең хаҡҡа ғына ҡалдыр* (Әкиәттән). *Бер юлға ҡалдырам, икенсе улай ҡыланаһы булма* (Әкиәттән).

**8.** Онотмай һаҡлау, башта, иҫтә тотоу. *Башта ҡалдырыу. Йөрәктә ҡалдырыу. Күңелдә ҡалдырыу. Хәтерҙә ҡалдырыу.* ■ *Таймурзин Сәғиҙәнең һәр бер хәрәкәтен, төҫөн, буй-һынын иҫтә ҡалдырырға тырышты.* М. Тажи.

**9.** Берәй маҡсат менән ниҙеңдер өлөшөн айырып ҡуйыу, теймәү. *Ара ҡалдырыу. Буш урын ҡалдырыу. Өлөш ҡалдырыу. Юлға аҙыҡ ҡалдырыу.* ■ *Килдебай һаҡалын эйәк аҫтында ғына ҡалдырып ҡырған.* Ғ. Дәүләтшин. *[Байғужа:] Көттөк, ҡайтманың. Һиңә ашарға ҡалдырҙыҡ.* Д. Юлтый.

**10.** Тоҡомға тәғәйенләп ҡуйыу.

**11.** Башҡарыр нәмәне башҡармай ҡуйыу. *Дәрес ҡалдырыу. Эш ҡалдырыу.* ■ *Аяҡтарым талдырып, төн йоҡомдо ҡалдырып, һелтәй-һелтәй ҡулдарҙы эҙләп киттем шуларҙы* (Халыҡ йырынан). / Ниҙәндер ситләтеү, мәхрүм итеү. *Аштан ҡалдырыу. Ҡунаҡтан ҡалдырыу. Өлөштән ҡалдырыу. Уйындан ҡалдырыу.*

**12.** Ниҙәндер азат итеү, ҡотҡарыу. *Хөкөмдән ҡалдырыу. Язанан ҡалдырыу.* ■ *[Шәүәлиҙе] аҡ билетҡа сығарып, һалдаттан ҡалдырғандар.* Б. Бикбай.

**13.** Хәҙерге мәлдән киләсәккә күсереү; кисектереү. *Аҙаҡҡа ҡалдырыу. Икенсе ваҡытҡа ҡалдырыу. Иртәнгә ҡалдырыу. Киләһе йылға ҡал-*

*дырыу. Һуңғарак калдырыу. Яҙҙан калдырмай түләү. Бөгөндән калдырмай эшләү.*

**14.** Төбәү килештәге исемдәргә эйәреп, шул исемдән аңлашылған төшөнсәле һүҙбәйләнеш яһай. *Аптырашка калдырыу. Дауға калдырыу. Йотка калдырыу. Оятка калдырыу. Эт көнөнә калдырыу.* ■ *Күк толпар Ҡарағас тауы башындағы үләнде ашап бөтөп, ерҙе какка калдырған, ти* (Әкиәттән).

**15.** *күсм. юкл. ф.* Эшкә яраҡһыҙға әйләндереү. *Геүләп торған тауыш колакты калдырманы.*

**16.** *юкл. ф.* Барыһын да эшләү, башҡарыу, бөтәһен дә әйтеү, тулыһынса алыу һ. б. аңлата. *Ылкаһын калдырмау. Эҙләмәгән ерҙе калдырмау. Әйтерлеген калдырмау. Берећен калдырмай сакырыу. Өҙөк калдырмай һөйләү.* ■ *Фәлән дә төгән тип, донъялағын калдырмай теҙеп алды ла китте Зөләйха.* Т. Йәнәби. *Бар яланды ураным калдырмай бер ерҙе лә* (Халыҡ йырынан).

**17.** *-п* формаһындағы хәл ҡылым менән килеп, тамамланғанлыҡты белдергән ҡушма ҡылым яһай. *Биклэп калдырыу. Бирел калдырыу. Бәйләп калдырыу. Йәшереп калдырыу. Онотоп калдырыу. Ташлап калдырыу. Төшөрөп калдырыу. Ултыртып калдырыу. Һаклап калдырыу. Һалып калдырыу. Әйтеп калдырыу. Яҙып калдырыу.* ■ *[Бабай] улының алтын ашығын көлгә күмеп калдырған* (Әкиәттән).

● *Айғыр калдырһаң, йүнлеһен калдыр; кускар калдырһаң, йөнлөһөн калдыр.* Мәҡәл. *Донъянығын әхирәткә калдырма.* Әйтем. *Ут үрләһә, мал калдырмаҫ.* Әйтем. *Якшы балаға ата малы кәрәкмәй, яман балаға мал калдырыу кәрәкмәй.* Әйтем.

**ҠАЛЙЫҒЫУ** *к. диал.* Ҡалтайыу.

**ҠАЛЙЫУ** *к. диал.* Ҡалтайыу.

**ҠАЛҠА** *и. диал.* Ҡалҡыуыс.

**ҠАЛҠАЙЫУ** *к. диал.* Ҡайҡайыу.

**ҠАЛҠАН** *и.* **1.** Ҡулға тотоп уҡ-ҡылыстан һ. б. һаҡлана торған, тимерҙән йәки ағастан эшләнгән боронғо ҡорал. *Салауат килә гәскәр башында, ат уйнатып, Урал буйлатып, калканкайы һәлмәк, уғы мәргән, баташа яуын кыра шаулатып* (Халыҡ йырынан).

**2.** Туп, пулемёттың һ. б. атыу ҡоралдарының алдындағы ҡорос ҡаплама.

**3.** *күсм.* Сит көстән ҡурғаған һаҡ. *Кукрәп үҫ һин, илем-хаклык, тынкыслык калканы.* Ш. Бикҡол.

**ҠАЛҠАНБАШ** *и.* Балалар уйнай торған йәйге уйын (оҙон таҡтаны урта тошонан бүрәнәгә арҡыры һалалар ҙа, ике яҡ башына ултырып ҡалҡыналар). *Ҡалканбаш уйнау. Ҡалканбаш эйеү.* / Шул уйындың таҡтаһы. *Ҡалканбаш яһау.*

**ҠАЛҠАНЛЫЛАР** *и. зоол.* Арҡаһында ҡаты ҡабығы булған һөтимәр йәнлектәр (Көньяҡ һәм Урта Америкала йәшәйҙәр).

**ҠАЛҠАНМОРОН** *и.* Башында эре ҡаты ҡабыҡтары булған ағыулы йылан.

**ҠАЛҠАНСЫҠ** *и.* Үҫемлек һутын һурып йәшәй торған ваҡ ҡына бөжәк.

**ҠАЛҠАҢЛАТЫУ** *к.* Баш-башын ҡалҡытып-төшөрөп ҡуҙғатыу. *Иҙәнде калкаңлатыу.*

**ҠАЛҠАҢЛАУ** *к.* Баш-башы ҡалҡып, төшөп тороу. *Ҡалкаңлап яткан такта.* ■ *Ел кыуалаган тулкындар оҙак көттөрмәне, уларҙың кәмәһе, сокорло юлдан барган сана төҫлө, калкаңлай башланы.* Н. Мусин.

**ҠАЛҠҠЫ** *и. диал.* Ҡалҡыуыс.

**ҠАЛҠМА** *и. диал.* Ҡалҡыуыс.

**ҠАЛҠЫМЫШ** *и. диал.* Ҡалҡанбаш.

**ҠАЛҠЫНЫУ** *к.* **1.** Әҙ генә ҡалҡыу, саҡ ҡына күтәрелеү. *Ҡалкынып тороу. Ултырған ерҙән калкыныу. Яткан ерҙән калкыныу.* ■ *Сынтимер .. калкынып баш әйгән музыканттарга рәхмәт тойгоһо менән караны.* Ш. Янбаев.

**2.** Үргә күтәрелеү, ҡалҡыу. *Тау артынан кояш калкынганда, алтынлана йәшел әрәмә.* Ғ. Хәйри.

**3.** Үҫеп, буйға күтәрелеү; үҫеү. *Бойҙай көндән-көн калкына.*

**4.** *күсм.* Хәрәкәткә ҡуҙғалыу; күтәрелеү, ҡалҡыу. *Көрәшкә калкыныу.* ■ *Бар донъяны таң калдырып, калкынды беҙҙең Ватан.* С. Әлибаев.

**ҠАЛҠЫНЫШЫУ** *к. урт. кар.* **ҡалҡыныу** 1, 4.

**ҠАЛҠЫС** [1] *и. диал.* Ҡалҡыулыҡ.

**ҠАЛҠЫС** [2]: **ҡалҡыс һөйәге** *диал.* ҡалаҡ һөйәге (*кар.* **һөйәк** [1] 1).

**ҠАЛҠЫТТЫРЫУ** *к. йөкм. кар.* **ҡалҡытыу.**

**ҠАЛҠЫТЫУ** *к.* **1.** Бер аҙ үргә күтәреү. *Бүректе калкытыу. Башты калкытып карау. Бүрәнәне калкытыу.* ■ *Айбулат уга [кайнына] торорга ярҙам итеп аркаһынан калкытты.* Һ. Дәүләтшина. *Ямғыр кеүек пуля яуа, баш калкытыр әмәл юк* (Бәйеттән).

**2.** Бейек итеп күтәреү. *Түбәһен күккә калкытып, Урал тора алыҫта* (Халыҡ йырынан).

**3.** Тулыштырып ҡабартыу, күтәреү. *Күкрәкте калкытып һулыш алыу.* ■ *Муйын тамырҙарын калкытып кыскырган Хәлимовка теге катын--кыҙҙар гәжәпләнеп караны.* Д. Юлтый.

**4.** *күсм.* Хәрәкәткә ҡуҙғатыу, күтәреү. *Илде көрәшкә калкытыу.*

♦ **Баш ҡалҡытыу** *кар.* **баш. Баш ҡалҡытмай [эшләү]** туҡтауһыҙ, ялһыҙ [эшләү]. **Тел ҡалҡытыу** ҡаршы һүҙ әйтеү; һүҙ алып һөйләү. *Кем дә булһа әйтер төҫлө ине, әммә тел калкытыусы булманы.* Й. Солтанов.

**ҠАЛҠЫУ** [1] *к.* **1.** Ятҡан, ултырған ерҙән күтәрелеү. *Аяк өҫтө калкыу. Урындан калкыу. Ҡалкып карау.* ■ *Йыһаннур Сәреуҙе бер һыгыуҙа калкып тормаҫлык итеп йыгып һалып куйҙы.* Т. Хәйбуллин.

**2.** Юғарыға, түргә менеү; үрләү. *Тауға калкыу. Урындыкка калкып ултырыу.* ■ *[Рәхимә:] Ауыл як һырттан һыбай калкһа, миңә килеп хәбәр итегеҙ.* Һ. Дәүләтшина.

**3.** Офоҡтан күтәрелеү, сығыу (күк есемдәренә ҡарата). *Йондоҙ калка. Ҡояш калка. Сулпан калка.* ■ *Көндөҙ күккә көн калкһа, көмөштәй балкый Урал тау.* Салауат Юлаев. / Күренеү; күтәрелеү. *Йәйгор калкыу. Таң калкыу. Томан калкыу. Шәфәк калкыу.* ■ *Күк болоттар күккә калка тиһәм, ул Ирәмәл — бейек тау икән.* Ҡ. Даян.

**4.** Бейек булып күтәрелеү, бейегерәк кимәлгә килеү. *Һыу калка.* ■ *Туфан калкып, донъяны һыу баҫыу легендаһы халыктар ижадында киң таралган.* Ф. Надршина. / Тулышып ҡабарыу,

күтәрелеү. *Аяҡ-ҡулдары күм-күк булған, күк тамырҙары бармаҡ йыуанлыҡ булып ҡалҡҡан.* Д. Юлтый.

**5.** Тибеп өҫкә сығыу. *Битҡә ҡыҙыллыҡ ҡалҡа. Бәпкә йөнө ҡалҡа.* ■ *Емеш өшөп, ҡош тәне ҡалҡҡан беләктәрен һыпырғылап, тағы бер аҙ тупһала тапаныып торҙо.* З. Биишева.

**6.** Үҫеп сығыу, буйға күтәрелеү; үҫеү. *Мыйығы ҡалҡмаған малай. Улән ҡалҡты.* ■ *Гөлдәр ҡалҡа беҙҙә яҙ булғас.* Н. Нәжми. *Бер быуынға ҡалҡты ужымдар.* С. Кулибай. / *күсм.* Барлыҡҡа килеү, үҫеп сығыу. *Яңы кадрҙар ҡалҡты. Уларҙы берҙәм коллектив итеп нығытыу бурысы килеп баҫты.* «Ағиҙел», 1970, № 5.

**7.** *күсм.* Хәрәкәткә ҡуҙғалыу, күтәрелеү. *Салауат яуы ҡалҡҡас, Айғашка шул яуға ҡатышып киткән* (Хикәйәттән).

◆ **Күкрәк ҡалҡыу** *шул уҡ* **бауыр ҡалҡыу** (*ҡар.* **бауыр**). **Өҫкә ҡалҡыу** *шул уҡ* **өҫкә сығыу** (*ҡар.* **өҫ** [1]).

● *Аҙаматҡа ҡул бирһәң, абруйың ҡалҡыр.* Мәҡәл.

**ҠАЛҠЫУ** [2] *с.* **1.** Бейегерәк булып ҡалҡып торған. *Ҡалҡыу күкрәк. Ҡалҡыу урын. Ҡалҡыу булып тороу. Ҡалҡыу итеп өйөү.* ■ *Халыҡ Урал батырҙы бик ҙурлап, хөрмәтләп, ҡалҡыуыраҡ бер ергә күмде, ти.* «Урал батыр». *Салауат менгән бейеккә, тау баштары ҡалҡыу ерҙәргә* (Халыҡ йырынан). / Бейегерәк булып торған ер; ҡалҡыулыҡ. *Ҡалҡыуҙарға сыҡтым ҡалҡыу тип, түгәйҙәргә төштөм һалҡын тип* (Халыҡ йырынан).

**2.** Буйға оҙонораҡ. *Ул иптәштәренән ҡалҡыу.*

**ҠАЛҠЫУЛЫҠ** *и.* Тирә-йүндән бейегерәк булып торған ер. *Сәғиҙә Хәйҙәрҙең ҡулын биленән ысҡындырҙы ла, башын түбән эйеп, ҡалҡыулыҡтан төшөп китте.* М. Тажи. *Ҡалҡыулыҡҡа күтәрелеп, тигеҙ ергә еткәс, [ат] тағы юрта башланы.* Я. Хамматов.

**ҠАЛҠЫУЫС** *и.* **1.** Ҡармаҡ ебенә йәки йылым, ау кеүек балыҡ тотоу ҡоралдарының өҫкө бауына тағылған, һыу өҫтөндә йөҙөп йөрөй торған еңел нәмә. *Ҡалҡыуыс бер батып, бер ҡалҡып һыу өҫтөндә йөрөнө лә, ҡапыл юҡ булды.* Ғ. Ибраһимов. / Һыу төбөндәге нәмәнең тәңгәлен белеү өсөн йөҙҙөрөп ҡуйылған билдә.

**2.** *тех.* Төрлө ҡорамалдағы шыйыҡлыҡты бер кимәлдә тотоу өсөн хеҙмәт иткән ҡулайламаның йөҙөп йөрөгән өлөшө. *Һыу ҡыуыу башняһының ҡалҡыуысы.*

**ҠАЛҠЫШ** *и. диал.* Ҡалҡыулыҡ.

**ҠАЛМА** *и. диал.* **1.** *ҡар.* **ҡалдыҡ** 1. *Һинең ҡалмаңды кем ашаһын.* // *Ҡалма кейем.*

**2.** Бола, тәртипһеҙлек.

**ҠАЛМАҠ** *и. һөйл.* Ҡалмыҡ.

**ҠАЛМЫҠ** *и.* Ҡалмыҡ АССР-ының төп халҡы һәм шул халыҡтың бер кешеһе (монгол телдәренең береһендә һөйләшә). *Ҡалмыҡ халҡы. Ҡалмыҡ ҡатыны. Ҡалмыҡ теле.*

**ҠАЛМЫШ** *и. диал. ҡар.* **ҡалдыҡ** 1. *Аҙыҡ ҡалмышы.*

**ҠАЛПАҠ** *и.* **1.** Ирҙәрҙең тирәсле баш кейеме; эшләпә. *Кейеҙ ҡалпаҡ. Һалам ҡалпаҡ.* ■ *Бабай .. йәпрәйгән ҡалпағы аҫтынан ҡыҙҙар яғына боролоп ҡараны.* Һ. Дәүләтшина.

**2.** Ҡатын-ҡыҙҙарҙың яулыҡ аҫтынан маңлайға кейә торған тәңкә-мәрйен менән биҙәүле түбәтәй һымағыраҡ баш кейеме. *Ынйылы ҡалпаҡ. Уҡалы ҡалпаҡ.* ■ *Әскәпъямал, нурың арта сәсҡап менән, ынйы теҙгән кесерәк кенә ҡалпаҡ менән.* Ш. Бабич. **Аҡ ҡалпаҡ** ситен биҙәкле итеп аҡ йөндән бәйләгән бик сөм башлыҡ рәүешендәге татар ҡалпағы (ситен төрөп, маңлайға текә ултыртып кейгәндәр ҙә, суҡлы осон артҡа һалып, өҫтән яулыҡ ябынғандар). **Артлы** (*йәки* **текә**) **ҡалпаҡ** ситен ҡатырға менән ҡатырып, түбәһен янсыҡлап, йөн менән суҡлап, бәрхәттән теккән ҡалпаҡ (маңлайға ғына кейеп, осон түбәгә һалып, өҫтән яулыҡ ябынғандар).

**3.** Төрлө нәмәнең өҫтөнә ҡуйылған киң түңәрәк япма. *Шәм ҡалпағы.*

**ҠАЛПАҠЛАУ** *ҡ.* Ҡалпаҡ (3 мәғ.) менән ҡаплау. *Ҡыуыҡлы шәмде ҡалпаҡлап яндырыу.*

**ҠАЛСАЙ** *и. диал.* Һары билсән.

**ҠАЛСАЙЫУ** *ҡ. диал.* Ҡалтайыу.

**ҠАЛТА** *и.* **1.** Бил ҡайышына тағып йөрөй торған ауыҙы бөрмәле күн моҡсай. *Йәнкәй-йәнәш китте ай һунарға, ҡалталарын тағып биленә* (Халыҡ йырынан). *[Ҡуҙыйкүрпәс бәйгенең] .. етенсеһенә ҡаҙаҡтар эшләгән яҡшы ҡалта ҡуя.* «Ҡуҙыйкүрпәс менән Маянһылыу».

**2.** *диал.* Аҡса янсығы. *Ҡалталары тулы тәңкә менән, услап алып бүләк биргәндә* (Халыҡ йырынан).

**3.** *диал.* Кеҫә.

**4.** *диал.* Ҡын. *Ғүмәровтан ҡалған алмас ҡылыс, ҡалталарын майлап кем тағыр* (Халыҡ йырынан).

◆ **Ҡалта өмәһе** аҡса ярҙамы. **Ҡалтаһы ҡалын** бай кеше тураһында.

**ҠАЛТАҒАЙ** *и.* **1.** Табанына тире ҡағылған ҡыҫҡа ғына яҫы һунар саңғыһы. *Ҡалтағай урғә менгәндә лә таймай.* Н. Мусин.

**2.** *диал.* Саңғы.

**ҠАЛТАЙТЫУ** *ҡ.* Салыш-солош итеп ҡыйшайтыу. *Тактаны ҡалтайтыу. Салғыны ҡалтайтып сүкеү.*

**ҠАЛТАЙЫУ** *ҡ.* Тигеҙлеген юғалтып, салыш-солош ҡыйшайыу. *Ҡалтайған ишек. Салғының йөҙө ҡалтайған.* ■ *[Харис] ҡубып, ҡалтая башлаған иҙән таҡталарына тибеп-тибеп ҡараны.* С. Агиш.

**ҠАЛТАЙЫШЫУ** *ҡ. урт. ҡар.* **ҡалтайыу.** *Ҡалтайышып бөткән таҡталар.*

**ҠАЛТАҠ** *с. диал. ҡар.* **меҫкен** 1.

● *Ир көнләшмәгән — ишәк, ҡатын көнләшмәгән — ҡалтаҡ.* Мәҡәл.

**ҠАЛТАҢ** *с. диал.* Тилбер.

● *Бай булһаң балпан бул, ярлы булһаң ҡалтаң бул.* Мәҡәл.

**ҠАЛТАҢЛАУ** *ҡ.* **1.** Ҡалт-ҡолт итеү. *Ҡалтаңлап ятҡан таҡта.*

**2.** *күсм.* Өтәләнеп ары-бире һуғылғылау; ҡалбырлау. *Ҡалтаңлаған кеше.*

**ҠАЛТ-ҠОЛТ** *оҡш.* Баш-башы ҡалҡып, төшөп ятҡанды белдергән һүҙ. *Ҡалт-ҡолт итеү. Иҙән таҡтаһы ҡалт-ҡолт итеп ята.*

**ҠАЛТЫР** *с.* Ҡалтырап торған, ҡурҡаҡ. *Батырҙа ла йөрәк була, ҡалтырҙа ла йөрәк була; батырҙа ул — мең гүмерлек, ә ҡурҡаҡта — мең үлерлек.* В. Йәнбәков.

**ҠАЛТЫРАНЫУ** *к. кайт. кар.* **ҡалтырау.** *Ҡалтыранма, юлсы, борсолма һин, беҙҙең йомош артыҡ ҙур түгел.* Ғ. Сәләм.

**ҠАЛТЫРАТЫУ** *к.* **1.** Дер-дер һелкетеү. *Ирен-де калтыратыу.* ■ *Талғын ғына өргән елбәҙәк ел ағас япрактарын калтыратып, йофар еҫе бөркҡән сәскә еҫтәрен биткә бәрә.* Т. Хәйбуллин.

**2.** *күсм.* Ҡурҡыу хәленә төшөрөү, ҡурҡытыу. *Дошманды калтыратыу.* ■ *[Тимергәле:] — Бына, исмаһам, үҙебеҙҙең Айбулат, курһәттеме үҙен егетең! Хатта Ныязғолдо калтыратты.* Һ. Дәүләтшина.

**3.** *эйһ. ф. кар.* **ҡалтырау.** *Йәйге таңда һалкын һыуға сумып сыҡкан кеүек калтырата башланы.* Р. Солтангәрәев.

**ҠАЛТЫРАУ** *к.* **1.** Ваҡ-ваҡ ҡына һелкенеү, дерелдәү. *Быуын калтырай. Ирен калтырай. Ҡул калтырай. Тубыҡ калтырай.* ■ *Уҫаҡ япраҡтары шаулай ҙа, елгә калтырай.* Ш. Бабич. / Өҙөлөп-өҙөлөп дерелдәү (тауышҡа ҡарата). *Юлияның тауышы капыл калтырап өҙөлдө.* Һ. Дәүләтшина.

**2.** *күсм.* Ныҡ ҡурҡыу. *Ҡалтырап төшөү.* **Дер ҡалтырау** 1) бик ныҡ ҡалтырау. *Бар тәне каткан һыуыкка, һыкрана дер калтырап.* Д. Юлтый; 2) *күсм.* бик ҡаты ҡурҡыу. .. *Ҡуй көтөүе кеүек, дошмандары дер-дер калтырай* (Халыҡ йырынан).

♦ **Ҡан ҡалтырау** бик ҡаты ҡурҡыу, ҡот осоу. *Кеше кан калтырап, зар аҙығы булып көн күргән.* Р. Назаров.

● *Күпшы өшөмәҫ, калтырар.* Мәҡәл.

**ҠАЛТЫРАУЫҠ** *и.* Дер ҡалтыраған хәл, хәрәкәт. *Ҡалтырауыҡ тота.* ■ *Тәнде тағы ла яман калтырауыҡ алды.* Д. Юлтый.

**ҠАЛТЫРАУЫҠЛЫ** *с.* Ҡалтырап торған, ҡалтырап тороусан. *Ҡалтырауыҡлы тауыш.*

**ҠАЛТЫРАШЫУ** *к. урт. кар.* **ҡалтырау.**

**ҠАЛТЫР-ҠОЛТОР** *окш.* Ҡаты нәмә бәрелеп-һуғылып әйләнгәндә, тәгәрләгәндә сыҡҡан тауышты белдергән һүҙ. *Ҡалтыр-колтор итеп барған арба.* ■ *Елгәргестәр калтыр-колтор әйләнергә тотондо.* Я. Вәлиев.

**ҠАЛТЫРЛАҠ** *с.* Ҡалтыр-ҡолтор тауышлы. *Ҡалтырлак арба.*

**ҠАЛТЫРЛАТЫУ** *к.* Ҡалтыр-ҡолтор иттереү, ҡалтыр-ҡолтор килтереү. *Арбаны калтырлатыу.*

**ҠАЛТЫРЛАУ** *к.* Ҡалтыр-ҡолтор итеү, ҡалтыр-ҡолтор килеү. *Елгәргес калтырлап әйләнә.*

**ҠАЛТЫРСА** [1] *и.* **1.** Киндер, тула һуғыусыларҙың сүрегә еп урай торған ҡоралы (ҡул менән әйләндерә торған һәлмәк тәгәрмәсе, шуның бер яҡ күсәр башында сүре кейҙерә торған урыны була). *Ул [Нәсимә] кайһы арала туктай ҙа, калтырсаға сүреһен кейҙерә һалып, еп урап ала, тағы һуға башлай.* Һ. Дәүләтшина.

**2.** *һөйл.* Ҡалтыр-ҡолтор итеп торған нәмә тураһында. *[Кәли:] Ҡуйып киткән булдылар, э бер тинлек файҙаһы юк. Телефон түгел был — калтырса.* И. Ғиззәтуллин.

**ҠАЛТЫРСА** [2] *и.* Ҡырағай өйрәктең бер төрө.

**ҠАЛТЫРЫШ** *с.* Ҡалтайып бөткән. *Ҡалтырыш салғы.*

**ҠАЛЪЯ** *и.* **1.** Бешкән иттең тәмле, майлы киҫәге.

**2.** *күсм.* Ниҙәндер төшөргән файҙа (аҡса, мал, өләш һ. б.). *Дүрт бүрәнәне машинаға һалғас: «Ҡалъяның майлыһы әләкте!» — тине Вәгиз.* Р. Ғабдрахманов.

● *Ҡапкан һайын калъя булмай.* Мәҡәл.

**ҠАЛЪЯЙЫУ** *к. диал.* Ҡалтайыу.

**ҠАЛЪЯН** *и.* Уҡ һалып арҡаға аҫып йөрөй торған һауыт. *[Батыр] уҡ тулы калъянын арткан, уң кулына оҙон һөңгө тотоп алған.* «Алдар менән Зөһрә». *Йәреш карт [Бикйәнгә] бер калъян һаҙак бирергә булды* (Әкиәттән).

**ҠАЛЫЙЫУ** *к. диал.* Кәйелеү.

**ҠАЛЫМ** *и. диал. кар.* **ҡалын** [2].

**ҠАЛЫН** [1] *с.* **1.** Арҡыры киҫеме, аҫҡы йөҙө менән өҫкө йөҙөнөң араһы сағыштырмаса ҙур; киреһе йоҡа. *Ҡалын боҙ. Ҡалын буҫтау. Ҡалын быяла. Ҡалын кағыҙ. Ҡалын кейеҙ. Ҡалын китап. Ҡалын такта.* ■ *Яр ситендәге талдарҙы калын кар күмеп киткән.* Ш. Янбаев. / Ҡатлы итеп тегелгән. *Ҡалын пальто. Ҡалын юрған.* // *Ҡалын кейенеү. Ҡарбуҙҙы калын итеп телеү. Майҙы калын һөртөү. Ҡалын итеп урау.* ■ *Кемдең .. өйө нык, кейеме калын — шул кеше генә кыштың һыуығын белмәй.* Ғ. Дәүләтшин.

**2.** Тулышып торған; итләс, йыуан. *Ҡалын елкә. Ҡалын кәүҙә.* / *күсм.* Ныҡлы, көслө. *Әхмәт — йәшен, уның исеменән теҙ сүгәләр калын егеттәр.* Ғ. Сәләм.

**3.** Тығыҙ, күп булып үҫкән; ҡуйы. *Ҡалын йөн. Ҡалын сәс. Ҡалын үлән.* ■ *Борон заманда Ҡариҙел башындағы калын урманда йәшәгән, ти, бер батыр* (Әкиәттән). / *күсм.* Күп һанлы, күмәк. *Ҡалын нәҫел. Ҡалын ырыу.*

**4.** Тонoҡ, түбән яңғырашлы (тауышҡа ҡарата). *Иренең тауышы бик калын, тамактан түгел, кайҙандыр ситтән килгән кеүек ишетелә.* С. Агиш.

**5.** *күсм. һөйл.* Етеш тормошло; хәлле, бай. // *Күршеләр калын йәшәй.*

♦ **Ҡалын елкә** *йәки* **елкәһе ҡалын** *кар.* **елкә. Ҡалын кеҫә** *йәки* **кеҫәһе ҡалын** *кар.* **кеҫә. Ҡалын тиреле** *йәки* **тиреһе ҡалын** *кар.* **тире** [1].

**ҠАЛЫН** [2] *и. этн.* **1.** Егет яғы ҡыҙҙың атаһына бирә торған мал. *Ҡалын малы. Ҡалын алыу. Ҡалын биреү.* ■ *Сафанан яусы килде. Йөҙ егерме һум мәһәр, инә тунына батшай сапан, .. калынға бер ат, туйына бер һыйыр һуйһа, Нәфисәне кулак Сафа картка бирергә риза булдылар.* И. Көҫәпҡол.

**2.** (*йәки* **ҡалын туйы**) Шул малды тапшырыу өсөн егет яғында үткәрелгән туй. *Ҡалын аткарыу. Ҡалынға сакырыу.* ■ *Этколдоң коҙаһы .. калынға килгәндә үҙ ауылының дығалдарынан ун һигеҙ сана коҙа-коҙағый, йәштәрҙән һайлап ун ике буйҙак һыбай коҙа алып килде.* Ғ. Дәүләтшин. **Ҡалын ҡайтарыу** ҡалын биреп, егет яғында туй үткәреү. *Шаһбал улына кәләш әйттергәйне. Октябрь байрамында туйҙары булды, хәҙер калын кайтарырға килгәндәр.* Р. Солтангәрәев.

**ҠАЛЫНАЙТЫУ** *к.* **1.** Йоҡанан ҡалынға әйләндереү, ҡалын итеү. *Түшәкте калынайтып түшәү.*

**2.** Итләс, йыуанға әйләндереү; йыуан итеү. *Ҡорһакты калынайтыу.*

3. Һирәктән ҡуйыға әйләндереү. *Сәсте ҡалынайтыу.* ■ .. *Өҫтәп сәселгән люцерна үләнде ҡалынайтырға ярҙам итә.* «Совет Башҡортостаны», 1965, 15 апрель.

4. Нәҙектән ҡалынға, тоноҡ яңғырашлыға әйләндереү. *Тауышты ҡалынайтыу.*

♦ **Кеҫә ҡалынайтыу** *ҡар.* **кеҫә.**

**ҠАЛЫНАЙЫУ** *ҡ.* **1.** Йоҡанан ҡалынға әйләнеү. *Боҙ ҡалынайған. Ҡар ҡалынайған.* ■ *Болоттар һаман ҡуйыра, ҡалыная бара.* Н. Мусин.

**2.** Ҡаҡсанан итләс, йыуанға әйләнеү. *Аҡбәкәл .. һимереп тә, корһаҡҡа ҡалынайып та бара ине.* С. Кулибай.

**3.** Һирәктән ҡуйыға әйләнеү. *Сәсе ҡалынайған. Үлән ҡалынайған.* / *күсм.* Һан яғынан артыу, әҙҙән күпкә әйләнеү. *Ғаиләһе ҡалынайған.*

**4.** Нәҙектән ҡалынға, түбән яңғырашлыға әйләнеү. *Тауышы ҡалынайған.*

**5.** *күсм. һөйл.* Хәлләнеү, байығыу.

♦ **Тире ҡалынайыу** *ҡар.* **тире** [1].

**ҠАЛЫНЛАУ** *ҡ.* Ҡалын [2] (1 мәғ.) биреү. *Башлы-күҙле булырға инде ваҡыт та етте, тик һис байлығыбыҙ юҡ ҡалынлап ҡыҙ алырлыҡ.* З. Биишева.

**ҠАЛЫНЛЫҠ** *и.* Нәмәнең ике яҡ йөҙөнөң араһы. *Таҡтаның ҡалынлығы бер иле.*

**ҠАЛЫП** [1] [*ғәр.*] *и.* **1.** Нәмәне бер рәүешкә һалып, күпләп эшләү өсөн ҡулланылған ҡорамал. *Быйма ҡалыбы. Итек ҡалыбы. Кирбес ҡалыбы. Кирбесте ҡалып менән һуғыу.*

**2.** *күсм.* Эште бер рәүешкә ҡороу өсөн билдәләнгән тәртип. *Эште яңы ҡалыпҡа ҡороу.* / Бер тәртипкә килтереү өсөн билдәләнгән үлсәм. *Башҡортостан хөкүмәте Өфөгә күсеү менән телде бер ҡалыпҡа һалыу юлында байтаҡ мөҙәкәрәләр булды.* Т. Йәнәби.

**3.** Әҙәби әҫәрҙең үҙенсәлеген билдәләй торған алымдар системаһы. *Шиғри ҡалып.* ■ .. *[Шиғыр ҡалыбында булған һөйләмдәрҙе] төрлө исемдәрҙә атап йөрөтәләр булһа кәрәк.* Ғ. Амантай.

♦ **Бер ҡалыпҡа һалыу** (*йәки* **киреү**) эштең асылын иҫәпкә алмай бөтәһен бер күҙлектән сығып баһалау. *[Председатель] бөтә колхозды бер ҡалыпҡа кирел, бер үлсәү менән үлсәп көн итте.* Н. Ғәлимов. **Үҙ ҡалыбыңа һалып үлсәү** берәй нәмәне үҙеңдән, үҙ күҙлегеңдән генә сығып баһалау.

**ҠАЛЫП** [2] *и.* Тотҡондағы кешенең аяҡ-ҡулын ҡоршай торған боронғо ағас ҡыҫа; ҡандал. *Ҡалып һалыу.*

**ҠАЛЫПЛАНЫУ** [1] *ҡ.* **1.** *төш. ҡар.* **ҡалыплау** [1]. *Ҡалыпланған кирбес.*

**2.** *ҡайт. ҡар.* **ҡалыплау** [1] 2. *Элек мәҡәләләр тормоштағы айырым күренештәр, тарихи ваҡиғалар, йолалар үҙәгенән сығып, телдән-телгә күсеп ҡалыпланһа, һуңға табан, күпселектә, әҙәбиәт аша .. тарала.* Ғ. Амантай.

**ҠАЛЫПЛАНЫУ** [2] *ҡ. төш. ҡар.* **ҡалыплау** [2]. *Ҡалыпланған аяҡ-ҡул.*

**ҠАЛЫПЛАТЫУ** [1] *ҡ. йөкм. ҡар.* **ҡалыплау** [1].

**ҠАЛЫПЛАТЫУ** [2] *ҡ. йөкм. ҡар.* **ҡалыплау** [2].

**ҠАЛЫПЛАУ** [1] *ҡ.* **1.** Ҡалыпҡа [1] (1 мәғ.) һуғыу, ҡалыпҡа кейҙереү. *Итекте ҡалыплау.* ■ *Балсыҡ әҙер булғас та станокка ҡуялар, унда уны ҡалыплап, сынаяҡ итеп ҡоялар.* Ғ. Амантай.

**2.** *күсм.* Бер үлсәмгә, бер рәүешкә килтереү. *Әҙәби телде ҡалыплау.*

**ҠАЛЫПЛАУ** [2] *ҡ.* Ҡул-аяҡты ҡалып [2] менән ҡоршау; ҡалып һалыу. *Тотҡонды ҡалыплау.*

**ҠАЛЫПЛАШЫУ** *ҡ.* **1.** *урт. ҡар.* **ҡалыплау** [1].

**2.** Бер рәүешкә килеү, ҡалыпҡа һалыныу; ҡалыпланыу. *Бер телдәге телмәр өндәре шул тел өсөн нығынған һәм ҡалыплашҡан була.* Ж. Кейекбаев.

**ҠАЛЫУ** *ҡ.* **1.** Кемдең йәки нимәнеңдер тиҙлегенә өлгөрә алмау, артта булыу. *Артҡа ҡалыу. Арып ҡалыу. Төркөмдән ҡалыу.* ■ *Беҙ бөтәбеҙ ҙә унан ҡалмаҫҡа, аҙымдарҙы уның аҙымына эйәртергә тырышабыҙ.* Д. Юлтый.

**2.** Киткәнгә эйәреп китмәй, билдәле бер урында, хәлдә тороу, булыу. *Алыҫта ҡалыу. Өйҙә ҡалыу. Тышта ҡалыу. Юлда ҡалыу.* ■ *Сәйҙел тышҡа сыҡты, Зәйнәп ҡалды баҫҡан көйө комод буйында.* Ғ. Сәләм. *Алыҫ китәм, тыуған ер ҡала.* Х. Ҡунаҡбай. / Китмәй булған, торған урында туҡталыу. *[Хужа:] Әҙерләнгән һый-хөрмәт бар. Ҡалығыҙ, ҡунаҡ булып китерһегеҙ.* Д. Юлтый. *Ҡал ошонда, ят һуҙыл да, шауламай тын ғына ят.* Ш. Бабич.

**3.** Киткән йәки үлгән кешенән кемдеңдер ҡарамағына, файҙаһына күсеү. *Һөйгәнең ҡала тимәйҙәр, һөймәгәнгә димләйҙәр* (Халыҡ йырынан). *Аталарҙан бала йәшләй ҡалһа, күкрәк көсө менән мал таба* (Халыҡ йырынан). / Кемдән йәки ниҙәндер һуң һаҡланыу. *Ата бабанан ҡалған ҡомартҡы. Иҫкенән ҡалған ғәҙәт.* ■ *Ҡулыма алған был күмер — йортобоҙҙан ҡалған күмер ул.* Салауат Юлаев. *Ҡалһын исемең мәңгегә — ысын һүҙ менән ат атаҡ.* Ш. Бабич.

**4.** Ҡайҙалыр урын алыу, урын алған хәлдә булыу. *Ер аҫтында ҡалыу. Уртала ҡалыу. Ут эсендә ҡалыу.* ■ *Мәсет манараһын комсомолдар ҡолатып төшөрөргә булғайны, карттар риза булманы, ҡалһын, ауылға бер йәм биреп тора, тинеләр.* М. Тажи.

**5.** Ниндәйҙер хәлгә дусар булыу, берәй хәлгә төшөү. *Ирһеҙ ҡалыу. Һүҙһеҙ ҡалыу. Ярҙамһыҙ ҡалыу. Йәтим ҡалыу. Мәхрүм ҡалыу. Тол ҡалыу. Яңғыҙ ҡалыу.* ■ *Хужаһыҙ ҡалған квартира сикһеҙ моңһоу, ҡайғылы күренде.* З. Биишева. *Ерһеҙ ҡалған башҡортҡа ерен бирәм, тигән ул.* Салауат Юлаев.

**6.** Булған сифат, хәл үҙгәрешһеҙ һаҡланыу, үҙ хәленсә тотолоу. *Асыҡ ҡалыу. Бикһеҙ ҡалыу.* ■ *Таштар ватып, тауҙар аҡтарғанда, һаман ҡалдың алғы сафтарҙа.* Ғ. Әмири.

**7.** Онотолмай һаҡланыу. *Йөрәктә ҡалыу. Күңелдә ҡалыу. Иҫтә ҡалыу. Хәтерҙә ҡалыу.* ■ *Тик үткәндән мейелә киләсәккә ҡайралынған киҫкен уй ҡалды.* Ғ. Амантай.

**8.** Һан, күләм, дәүмәл йәһәтенән бөтмәй күпмелер һаҡланыу. *Аҡса әҙ ҡалған. Бер аҙым ара ҡалған. Ваҡыт ҡалмаған.* ■ *Бер генә башы ҡалған аждаһа Килтәймәргән менән алыша башлаған* (Әкиәттән).

**9.** Ниндәйҙер эш-хәл башҡармай ҡуйылыу, үтәлмәү. *Ашар аш ҡала. Йоҡлар йоҡо ҡала.* ■ *— Мәктәптә дәресем ҡала бит әле, бөгөн*

*дә уҡырға бара алманым.* М. Тажи. / Ниҙәндер мәхрүм булыу. *Аштан ҡалыу. Ҡунаҡтан ҡалыу.* ■ *Арбам һынды тип, күстән ҡалма, башым ауырта тип, эштән ҡалма.* М. Ҡулаев.

**10.** Ниҙәндер азат булыу, ҡотолоу. *Хеҙмәттән ҡалыу. Үлемдән сак ҡалыу.* / Ниндәйҙер сифаттан, нәмәнән яҙыу. *Ҡарыуҙан ҡалыу. Өнһөҙ ҡалыу. Тамаҡтан ҡалыу. Телдән ҡалыу.* ■ *[Гөлбоҫтан:] Әсәм .. әллә нишләп шәкәрҙән ҡалды ла ҡуйҙы, шәкәрҙе ауыҙына ла алмай.* Ғ. Дәүләтшин.

**11.** Хәҙерге мәлдән ҡасанғалыр кисегеү. *Ҡыҫҡа ҡалыу. Ҡышҡа ҡалыу. Ямғырға ҡалыу. Төнгә ҡалыу.*

**12.** *юкл. ф.* Алдында килгән юҡлыҡ формаһындағы ҡылым менән эш-хәлдең мотлаҡ үтәләсәген белдерә. *Демонстрацияға сыҡмай ҡалмау.* ■ *Бер башлағас, бөтмәй ҡалмаһын, тамамлайыҡ йырҙың аҙағын.* Ғ. Сәләм.

**13.** *юкл. ф.* Үҙенән алда килгән һүҙҙәр белдергән эшкә, хәрәкәткә, нәмәгә тулыһынса үтәлгәнлек мәғәнәһе бирә. *Йөрөмәгән ер ҡалманы. Ҡоро нәмә ҡалманы. Уҡымаған китап ҡалманы. Һөйләшмәгән кеше ҡалманы.* ■ *— Сәхибә бер кемдән дә ҡалманы, ти. Һәр кемде ҡабул итә икән, ти.* Ғ. Хәйри.

**14.** Төбәү килештәге исемдәргә эйәреп, шул исемдән аңлашылған төшөнсәле һүҙбәйләнеш яһай. *Аптырашҡа ҡалыу. Көлкөгә ҡалыу. Күмергә ҡалыу. Ҡыйынлыҡҡа ҡалыу. Оятҡа ҡалыу. Хурға ҡалыу.*

**15.** *юкл. ф. көсм.* Эшкә яраҡһыҙға әйләнеү. *Табандарым ҡалманы.* ■ *[Һылыуҡай:] Уф! Йән тирҙәрем сыҡты, билем ҡалманы.* Б. Бикбай.

**16.** *⸗п* формаһындағы хәл ҡылым менән килеп ҡушма ҡылым яһай: а) эш-хәлдең үткәндә тамамланышын аңлата. *Аҙашып ҡалыу. Бикләнеп ҡалыу. Илап ҡалыу. Йоҡлап ҡалыу. Ҡарап ҡалыу. Оҙатып ҡалыу. Төшөп ҡалыу. Тороп ҡалыу. Ултырып ҡалыу.* ■ *Мәҙрәсәне тентеһәләр — таҙ Йосоп ҡалған боҫоп.* Ш. Бабич; б) бер хәлгә дусар булғанды аңлата. *Туңып ҡалыу.* ■ *Ана, һары баҡса тиҙҙән япраҡ ҡойоп, ҡороп ҡалыр ҡартлыҡ шикелле.* Ғ. Сәләм.

**17.** *⸗п* формаһындағы хәл ҡылым менән килеп, ярҙамлыҡ ҡылым сифатында ҡушма ҡылым яһай: а) ҡапыл бер хәлгә төшөүҙе аңлата. *Аптырап ҡалыу. Иҫәңгерәп ҡалыу. Ҡаушап ҡалыу. Тынып ҡалыу.* ■ *Әхмәт нимә булғанын үҙе лә аңламай ҡатып ҡалды.* И. Көҫәпҡол; б) бер эш-хәрәкәтте башҡарып өлгөрөүҙе аңлата. *Абайлап ҡалыу. Белеп ҡалыу. Ишетеп ҡалыу. Күреп ҡалыу. Күҙгә салынып ҡалыу. Әйтә алмай ҡалыу.* ■ *Шафиҡ нисек йоҡлап киткәнен һиҙмәй ҡалды.* Я. Хамматов; в) уңайы килгәндә ниҙелер башҡарып ҡуйыуҙы аңлата. *Һыйлап ҡалыу. Байып ҡалыу.* ■ *Әйҙә, туған, тура килгәндә рәхәтләнеп ҡал.* К. Мәргән. *Был ғүмерҙәр ике килмәй, уйнап-көлөп ҡалайыҡ* (Халыҡ йырынан); г) оҡшатыу һүҙҙәре һәм итеү ҡылымының *⸗п* формаһы менән ҡапыл булған эш-хәлде аңлата. *Йөрәк жыу итеп ҡалды. Халыҡ шау итеп ҡалды. Тәнем зымбыр итеп ҡалды.*

**18.** *⸗п* формаһындағы хәл ҡылым менән килеп, әҙ генә яҡшыраҡ хәлгә килеүҙе аңлата. *Ҡыҙыҡ булып ҡалыу. Рәхәт булып ҡалыу.* ■ *[Юлдаш:] Бына миңә еңелерәк булып ҡалды.* З. Биишева.

**19.** Төп ҡылым менән бер үк формала килеп, «да» теркәүесе аша бәйләнгәндә, эш-ҡылыҡтағы ныҡышмалылыҡты аңлата. *Бәйләнде лә ҡалды.* ■ *[Яланбикә:] Ҡәһәрлекте күргем дә килмәй, әллә нимәһенә ҡаныҡҡан да ҡалған.* Һ. Дәүләтшина.

**20.** *⸗а/⸗ә* формаһындағы хәл ҡылым менән килеп, шарт һөйләмдең мәғәнәһен көсәйтә. *Беҙҙең иптәштәр, һорау була ҡалһа, аранан һис кемде бирмәү тураһында һүҙ алып баралар.* Д. Юлтый. *Сит-ят кеше килә ҡалһа, һаулап сығып абалай.* Ғ. Амантай. / Төбәү килеш формаһындағы һүҙ менән килеп, ниндәйҙер эш-хәрәкәттең мөмкин булған шартын аңлата. *Йүгерергә ҡалһа, ҡалышмам.* С. Агиш.

**21.** Ҡылымдың *⸗***һы,** *⸗***ырға** формаһындағы ҡылым менән килеп, ниндәйҙер эш-хәрәкәтте мыҫҡыл менән кире ҡаҡҡанды аңлата. *[Байназар:] Комсомол башым менән иҫке йола артынан ҡыуаһым ғына ҡалған.* Б. Бикбай. / Шул уҡ грамматик шартта асыулы үкенесте белдерә. *Ҡыуып сығараһы ҡалған. Әйтәһе ҡалған.*

◆ **Күҙгә ҡарап ҡалыу** *ҡар.* **ҡарау. Төшөп ҡалған** 1) булдыҡһыҙ, бешмәгән; 2) һанға һуғылмаған, иҫәптән сыҡҡан. *Ул төшөп ҡалған кеше, уны бар тип тә белмәйҙәр.* **Уға** (*йәки* **кемгәлер) ҡалған** кешенең һәләтенә шик белдереп, мыҫҡыл итеп әйтелә. *Уға ҡалған беҙҙең менән ярышырға.* **Үҙенә ҡалһа** кешенең эш-ҡылығын кәмһеткәндә әйтелә. *Үҙенә ҡалһа, ағаҫҡа бер ҙә иҫе китмәй инде* (Әкиәттән). **Шул ғына ҡалған** бер эш-хәлде хупламағанда әйтелә.

● *Арбам һынды тип күстән ҡалма.* Мәҡәл. *Ат ауынаған ерҙә төк ҡала.* Мәҡәл. *Бөгөндән ҡалған бөлгән.* Мәҡәл. *Ҡайҙа барһаң да ҡара һаҡалың ҡалмаҫ.* Мәҡәл. *Ҡалған эшкә ҡар яуа.* Мәҡәл. *Ҡараҡтан ҡалыр, уттан-һыуҙан ҡалмаҫ.* Мәҡәл. *Малы барҙан мал ҡалыр, улы барҙан ул ҡалыр.* Мәҡәл.

**ҠАЛЫШЫУ** *ҡ.* Хәрәкәт иткәндә артҡа ҡалыу. *Айғыр урмандар, тауҙар аша .. саба, ә тауҙан бәреп сыҡҡан көслө һыу уның аяҡ эҙенән ҡалышмай, ти* (Әкиәттән). / Кәмгә ҡалыу, кәм булыу. *Кластар бейек, яҡты, ҡала мәктәптәренән һис ҡалышмай.* Ш. Янбаев.

**ҠАМ** *и.* Мәжүсиҙәрҙең дини йола, им-том башҡара торған кешеһе.

**ҠАМА** *и.* **1.** Һыуһарҙар ғаиләһенә ҡараған оҙон ҡойроҡло, ҡара көрән йөнлө йыртҡыс һыу йәнлеге. *Ай-һай тигән тауышҡа ҡама ҡаса ҡамышҡа* (Халыҡ йырынан).

**2.** Шул йәнлектең тиреһе. / *с. мәғ.* Шул йәнлектең тиреһенән тегелгән, эшләнгән. *Ҡама бүрек. Ҡама ҡырпыу. Ҡама тун. Ҡама яға.*

**3.** Төрлө аҫыл йәнлек тиреһе. *Ҡамсат ҡама. Ҡондоҙ ҡама.* ■ *Кейгән тундарының эй яғаһы, ниндәй ҙә генә йәнлек ҡамаһы* (Халыҡ йырынан).

**ҠАМАҒЫШ** *и. диал. ҡар.* **ҡамаш** [1].

**ҠАМАЛАНЫУ** [1] *ҡ.* Төрлө яҡтан ҡамалыу. *Кәбәндең башында бер ҡыҙ утҡа ҡамаланып ҡалған да, нишләргә лә белмәй ултыра, ти* (Әкиәттән).

**ҠАМАЛАНЫУ** [2] *к. төш. ҡар.* **ҡамалау** [2]. *Тунының иҙеүе ҡамаланған.*

**ҠАМАЛАТЫУ** [1] *к. йөкм. ҡар.* **ҡамалау** [1].

**ҠАМАЛАТЫУ** [2] *к. йөкм. ҡар.* **ҡамалау** [2].

**ҠАМАЛАУ** [1] *к.* Төрлө яҡтан уратып алыу; ҡамау. *Ҡуҙыйкүрпәс .. ҡороҡ алды ла, теге тыу бейәне ҡамалай башланы, ти.* «Ҡуҙыйкүрпәс менән Маянһылыу».

**ҠАМАЛАУ** [2] *к.* Ҡама тиреһе тотоу. *Бүректе ҡамалау. Тунды ҡамалау.*

**ҠАМАЛЫУ** *к. төш. ҡар.* **ҡамау** [1]. *[Ильяс:] Беҙ дошман тарафынан өс яҡтан ҡамалғанбыҙ. Дүртенсе яҡ — кеше үтмәҫ һаҙлыҡ.* Ә. Мирзаһитов.

**ҠАМАЛЫШ** *и.* Төрлө яҡтан бикләп, уратып алынған хәл. *Ҡамалышта ҡалыу.* / Төрлө яҡтан уратып алынған шарт, хәл. *Капиталистик ҡамалыш.*

**ҠАМАР** *и. диал. ҡар.* **ҡәмәр** [2].

**ҠАМАС** *и.* Йылымдың ҡамап сығара торған осо.

**ҠАМАСАУ** [1] *и.* Берәй нәмәгә килгән тотҡарлыҡ, уңайһыҙлыҡ; оронсоҡ. *Ҡамасау һалыу. Ҡамасау яһау. // Ҡамасау эш.* ■ *Башҡорт мәркәзе яңы ғына ҡускәнлектән, ойоштороу эшендә күп кенә ҡамасау бар ине.* Д. Юлтый.

**ҠАМАСАУ** [2] *и.* Сәбертеп, сейләнеп, ҡысып торған тире ауырыуы.

**ҠАМАСАУ** [3] *и.* Үртәп, көлөн ҡысыуға һөртә торған үлән.

**ҠАМАСАУЛАУ** *к.* Ҡамасау һалыу, ҡамасаулыҡ итеү; оронсоҡлау. *Йоҡларға ҡамасаулау. Эшләргә ҡамасаулау.* ■ *Ҡар өҫтө аҡ ком кеүек ҡыштырлай, атларға ҡамасаулай.* Һ. Дәүләтшина.

**ҠАМАСАУЛЫ** *с.* Төрлө тотҡарлыҡ, уңайһыҙлыҡ тыуҙырған; оронсоҡло. *Ҡамасаулы эш.*

**ҠАМАСАУЛЫҠ** *и.* Эш-хәрәкәткә ҡамасау һалған хәл. *Ҡамасаулыҡ тыуҙырыу.* ■ *Бына шул сауҙа .. эшебеҙҙәге ҡамасаулыҡтар ҙа тауарҙың хаҡын киммәтләндерә.* С. Агиш. **Ҡамасаулыҡ итеү** ҡамасаулау.

**ҠАМАСЛАУ** *к.* Ҡамасты әйләндереп ҡамау. *Йылымды ҡамаслап сығарыу.*

**ҠАМАСТАУ** *с. диал. ҡар.* **ҡамау** [3]. *Ҡамастау ер.*

**ҠАМАТЫУ** *к. йөкм. ҡар.* **ҡамау** [1]. *Малды ҡаматыу.*

**ҠАМАУ** [1] *к.* **1.** Тирә-яҡлап уратыу, әйләндереү. *Аҫыл гөлдәр ҡамап алған тирә-яғымды.* Ғ. Әмири.

**2.** Уратып, инер-сығыр юлды бикләү. *Ҡамап тотоу. Юлды ҡамау.* ■ *Пайтәхетте, шанлы ҡаланы, дошман яуы килеп ҡаманы.* М. Кәрим.

**ҠАМАУ** [2] *и.* Ҡамап алынған, тирә-яҡтан уратып алынған хәл; ҡамалыш. *Ҡамауҙа тороп ҡалыу. Ҡамауҙа ултырыу.* ■ *Кәжән йылғаһын аша сығып оло юлға төшкәс тә, [Ҡолсобай отряды] ҡамауға эләкте.* Я. Хамматов.

**ҠАМАУ** [3] *с.* Тирә-яҡлап уратып алынған (урынға ҡарата). *Ҡамау ер.*

**ҠАМАУ** [4] *с. диал. ҡар.* **урау** [2]. *Ҡамау юл.*

**ҠАМАШ** [1] *и.* Теш төбө.

**ҠАМАШ** [2] *и. диал. ҡар.* **аңҡау** [1].

**ҠАМАШАУ** *и. диал. ҡар.* **аңҡау** [1].

**ҠАМАШТЫРЫУ** *к.* Ҡамашырға [2] мәжбүр итеү. *Теште ҡамаштырыу.* ■ *Күҙҙе ҡамаштырып, нур сәселде елкалағы бик күп тәтәйҙән.* А. Игебаев. *[Миләштең] .. тәме әлегә әсе һәм теште ҡамаштыра.* «Совет Башҡортостаны», 1980, 16 сентябрь.

**ҠАМАШЫУ** [1] *к. урт. ярҙамл. ҡар.* **ҡамау** [1]. *Малды ҡамашыу.*

**ҠАМАШЫУ** [2] *к.* **1.** Әсе, ҡырҡыу нәмәнән сағылыу (тешкә ҡарата). *Сейәне тештәрем ҡамашҡансы ашаным.* М. Ҡулаев.

**2.** Күҙ сағылйыу. *Күҙ ҡамаша.* ■ *Ишектәрҙә бәрхәт пәрҙә, күрһәң, күҙҙәр ҡамаша.* Т. Арслан.

**ҠАМҒАҠ** *и.* **1.** Орлоғо өлгөргәс, тамырынан өҙөлөп, ел ыңғайына тәгәрләп китә торған дала үҫемлеге. *Һары ҡылған менән ҡапланған даланан ҡоро ҡамғаҡтар ҡубып сыға ла, .. һикерә, ырғый тәгәрләп, дала уртаһында саҡ-саҡ ҡына күренеп ултырған башҡорт ауылына килеп инә.* З. Биишева.

**2.** *күсм.* Йүгерекләп, көйәләнеп, ҡауғалап йөрөүсән кеше тураһында. *Ҡамғағы әйләнеп йөрөй.* / Кеше ыңғайына йөрөүсән аумаҡай кеше тураһында.

**ҠАМҒАҠЛАУ** *к.* Көйәләнеп, ҡауғалап йүгерекләү.

**ҠАМҠА** [1] *и.* Биҙәкле ҡытай ебәге. *Сыңғыҙ хан да яу асып, .. бөтә улын бей иткән, кейемен ебәк, ҡамҡа иткән, атын арғымаҡ иткән.* «Мәргән менән Маянһылыу».

**ҠАМҠА** [2] *и.* Ҡанат өҫтө ҡыҙыл йәки һары төҫтәге, ҡара төрткөлө ваҡ ҡына йомро ҡуңыҙ. *Ете төрткөлө ҡамҡа. Ике төрткөлө ҡамҡа.*

**ҠАМЛАУ** *к. этн.* Мәжүсиҙәрҙә: дини йола, им-том эше башҡарыу.

**ҠАМСА** *и.* Сельдтар ғаиләһенә ҡараған ваҡ диңгеҙ балығы.

**ҠАМСАТ** *и.*, **ҡамсат ҡама 1.** Һыуһарҙар ғаиләһенә ҡараған ҡыҫҡа ғына аяҡлы, ҙур кәүҙәле, ҡара-көрән йөнлө көнсығыш диңгеҙ йәнлеге; диңгеҙ ҡамаһы. *Ҡамсат тиреһе.*

**2.** Шул йәнлектең тиреһе. / *с. мәғ.* Шул йәнлектең тиреһенән тегелгән. *Ҡамсат бүрек. Ҡамсат яға.*

**ҠАМСЫ** *и.* Һыбай кеше йөрөтә торған ҡыҫҡа сыбыртҡы. *Армытлы ҡамсы. Бүре һуҡҡыс ҡамсы. Бөлдөргәле ҡамсы. Ҡайыш ҡамсы. Ҡамсы үреү. Ҡамсы менән һуғыу.* / Шуның менән һуҡҡан яза. *Ҡамсы алыу.* ■ *[Исправник:] Сисендерегеҙ! Бер илле ҡамсы бирһәгеҙ, унан үҙе лә әйтер.* Т. Хәйбуллин. **Кейәү ҡамсыһы** 1) ҡыҙҙы кейәүләп барғанда егеттең ҡулында була торған ҡамсы (һабы ҡоралайҙың енсек һөйәгенән йәки еҙ, көмөш биҙәкле ағастан эшләнгән, үҙе быуын-быуын суҡлы итеп үрелгән була); 2) *бот.* быуын-быуын теҙелеп торған алһыу күк суҡ сәскәле баллы үлән; майсыбыҡ. *Урмандар йәшел япраҡҡа төрөндө, тауҙарҙа кейәү ҡамсылары тумалды.* Р. Низамов. **Туйыр ҡамсы** күп ҡайыштан үрелгән йыуан ҡамсы. *Көмөш ҡашлы эйәр, көмөшлө күмелдерек, көмөшлө йүгән, туйыр ҡамсы, ебәк билғау — һәр ҡайныһы үҙ урынына матурлап элеп ҡуйылған.* Ғ. Дәүләтшин.

● *Яҡшы атҡа ҡамсы кәрәкмәй.* Әйтем.

**ҠАМСЫҒОРТ** *и.* Кешенең эсәгенә төшөп, ҡан һурып ята торған ҡорт.

**ҠАМСЫЛАТЫУ** *ҡ. йөкм. ҡар.* **ҡамсылау.**

**ҠАМСЫЛАУ** *ҡ.* **1.** Ҡамсы менән туҡмау. *[Шәйхел бабай:] Мин атты ҡамсылаған кешеләрҙе бик яратып етмәйем.* В. Исхаҡов.

**2.** *күсм.* Һүҙ менән сыптырыу; тәнҡитләү, әрләү. *[Бабич] сатираһы .. «дин», «милләт» һүҙҙәрен үҙ синфи мәнфәғәттәре өсөн ҡорал итергә керешкән буржуа ялсыларын ҡамсылай башланы.* С. Ҡудаш.

**ҠАМТАРЫУ** *ҡ. ҡар.* **ҡантарыу.**

**ҠАМТАУ** *ҡ. диал. ҡар.* **ҡамау** [1].

**ҠАМТЫУ** *ҡ. диал.* Маҡтыу. *Ҡамтып тотоу.*

**ҠАМУС** [*ғәр.*] *и. иҫк. кит.* Һүҙлек. *Ҡамусе ғөлүм энциклопедия.*

**ҠАМШАЛЫУ** *ҡ. төш. ҡар.* **ҡамшау.** *Кәзәкейеңде мул теккәндәр, сабыуҙары бигерәк ныҡ ҡамшалып тора.* Т. Морат.

**ҠАМШАРЫУ** *ҡ. диал.* Умырыу.

**ҠАМШАТЫУ** *ҡ. йөкм. ҡар.* **ҡамшау.**

**ҠАМШАУ** *ҡ.* **1.** Әйләндереп тотоу йәки тоттороу; уратып алыу. *Ҡамшап ҡосаҡлау.* ■ *Халыҡ беҙҙе ҡамшап алды.* Т. Морат.

**2.** *күсм.* Әйләндереп биләү; уратып ҡамау. *Тирә-яҡты ҡамшап тотоу. Ҡамшап алыу.*

**ҠАМЫЛ** *и.* Игендә урғас, төбөндә ултырып ҡалған һабағы. *Эй, баҫыуҙа башаҡ йыйған сағым ҡамылдарҙа аяҡ ҡанатып.* Ғ. Дәүләтов. / Үҫеп ултырған игендең һабағы. *Ҡамылда ултырған иген. Ҡамыл ҡатырыу.* ■ *Бойҙай бик уңған, .. башы түбән эйелгән, ҡамылы оҙон.* М. Ғафури.

◆ **Ҡамыл ер** игене урылып, ҡабаттан әле һөрөлмәгән ер. *Күпме ҡамыл ерҙәр һабан көтөп ята.* Б. Бикбай. **Ҡамыл төбө** ашлығы урылған ерҙең тупрағы. **Ҡамылға ултырыу** һабаҡ ебәреү, һабаҡланыу. *Арыш ҡамылға ултыра башланы.*

**ҠАМЫР** [*ғәр.*] *и.* **1.** Ниҙер бешереү өсөн баҫҡан он иҙмәһе. *Сөсө ҡамыр. Әсе ҡамыр. Йомортҡаға баҫҡан ҡамыр. Һөткә баҫҡан ҡамыр. Арыш ҡамыры. Билмән ҡамыры. Икмәк ҡамыры. Туҡмас ҡамыры. Ҡамыр баҫыу. Ҡамыр әсетеү.* **Ҡамыр ашы** ондан бешергән аҙыҡ.

**2.** Ҡулынан йүнле эш килмәгән, бешмәгән, булдыҡһыҙ кеше тураһында.

◆ **Ҡамыр ағасы** (*йәки* **емеше**) *диал.* Энәлек. **Ҡамыр аяҡ** тиҙ атламаған, кәрһеҙ (балаға ҡарата).

● *Ҡатын кеше ҡамыр менән ҡартая, бала менән һарғая.* Әйтем.

**ҠАМЫРЛАМА** *и. диал.* Энәлек.

**ҠАМЫРЛАНЫУ** *ҡ. төш. ҡар.* **ҡамырлау.** *Ҡулы ҡамырланған.*

**ҠАМЫРЛАУ** *ҡ.* Ҡамырға буяу. *Ҡулды ҡамырлау.*

**ҠАМЫРТАРАҠ** *и. диал. ҡар.* **ҡылыс** [2].

**ҠАМЫТ** *и.* Йөк тағып һөйрәтеү өсөн екке малдың муйынына кейҙерә торған нәмә. *Ҡайыш ҡамыт. Үгеҙ ҡамыты. Йүкә ҡамыт. Ҡамыт кейҙереү. Ҡамыт йүнәтеү. Ҡамытын һыпырыу.* ■ — *Ҡамытыңды миңә ебәр, яңынан мөйәт ҡуйып, кейеҙләп [бирермен].* Ф. Иҫәнғолов. **Ҡамыт бауы** *ҡар.* **колаҡбау** [1]. **Ҡамыт әнәһе** *ҡар.* энә 1.

◆ **Ҡамыт аяҡ** *ҡар.* **аяҡ** [1]. **Муйынға ҡамыт кейеү** ауыр бурыс алыу, ауыр эш йөкмәү. **Муйынына ҡамыт теймәгән** 1) бер ҙә егелмәгән (атҡа ҡарата). *Был өйөрҙә гел [йылҡылдап] торған, муйынына ҡамыт теймәгән йәш йылҡы ине.* Н. Мусин; 2) ауыр эш күрмәгән, донъя ауырлығын татып өлгөрмәгән (кешегә ҡарата).

● *Ҡамытҡа ҡарап ат алмайҙар.* Әйтем.

**ҠАМЫТБАУ** *и. ҡар.* **колаҡбау** [1].

**ҠАМЫТ-ДУҒА** *и. йыйн.* Атты егеү өсөн кәрәк булған нәмәләр. *Ул [Айбулат] .. ҡамыт-дуғаны тәртә араһынан ситкә алып ырғытты.* Һ. Дәүләтшина.

**ҠАМЫТ-ҠОРАНТЫ** *и. диал.* Ҡамыт-дуға.

**ҠАМЫТ-ҠУЛАН** *и. диал.* Ҡамыт-дуға.

**ҠАМЫТЛАТЫУ** *ҡ. йөкм. ҡар.* **ҡамытлау.**

**ҠАМЫТЛАУ** *ҡ.* Ҡамыт кейҙереү. *Ҡамытлап егеү.*

**ҠАМЫТЛЫҠ** *и.* Ат муйынының ҡамыт ята торған урыны.

**ҠАМЫТ-ЫҢҒЫРСАҠ** *и. ҡар.* **ҡамыт-дуға.**

**ҠАМЫШ** *и.* Күрәндәр ғаиләһенә ҡараған һыу ситендә үҫә торған көпшәк һабаҡлы эре үлән. *Екәнле ҡамыш. Күл ҡамышы. Йомро ҡамыш. Ҡырлы ҡамыш. Һаҙ ҡамышы. Ялпаҡ ҡамыш.* ■ *Әлегерәк бында аҙым һайын күл булған тип һөйләйҙәр. Тора-бара улар әҙәйгән. Күбеһенең һыуы кәмегән, ситтәрен ҡамыш, күрән баҫҡан.* Ә. Вәли. **Бала ҡамыш** мал ашай торған ваҡ ҡамыш. **Безелдәк** (*йәки* **сүре**) **ҡамыш** *ҡар.* **колан-ҡойроҡ.**

◆ **Шәкәр ҡамышы** ҡыяҡлылар ғаиләһенә ҡараған һабағынан шәкәр алына торған тропик һәм субтропик үҫемлек. *Шәкәр ҡамышы — күп йыллыҡ үҫемлек.*

● *Күл ҡамышһыҙ булмай, күңел һағышһыҙ булмай.* Әйтем.

**ҠАМЫШҠАРА** *и.* Ыласындар ғаиләһенә ҡараған, ҡамыш араһында оялап, өйрәк, баҡа, йомран, сысҡан тибеп ашай торған һаҙ мүктәргеһе (ҡарғанан ҙурыраҡ, башы, ҡойроғо буҙ, түше сыбар, ҡалған ере асыҡ көрән төҫтә).

**ҠАМЫШЛЫҠ** *и.* Ҡамыш күп үҫкән ер. *Йылға буйҙары ай ҡамышлыҡ, аҡҡош балалары ҡағына* (Халыҡ йырынан).

**ҠАМӘТ** [*ғәр.*] *и. иҫк.* **1.** Намаҙ алдынан аяғүрә тороп уҡыла торған доға. *[Мәзин:] Аҙан, ҡамәттәр барыһы ла үҙебеҙҙең телдә уҡылһын ине, тим.* А. Таһиров. **Ҡамәт төшөрөү** намаҙ башланғанын хәбәр итеү. *Аҙан әйтеп, ҡамәт төшөрҙөләр, мин тик аяғүрә ҡалҡманым.* М. Ғафури.

**2.** Буй-һын, кәүҙә.

**ҠАН** [1] *и.* **1.** Күҙәнәктәрҙе туҡландырып, тән буйлап йөрөгән ҡыҙыл шыйыҡса. *Артерия ҡаны. Вена ҡаны. Аҡ ҡан бөртөксәләре (лейкоциты). Ҡыҙыл ҡан бөртөксәләре (эритроциты). Ҡан йөрөшө. Ҡан биреү. Ҡан ебәреү. Ҡан ағыу. Ҡанға туҙыу. Ҡанға буялыу.* ■ *Сергеевтың битенән юлаҡ-юлаҡ булып ҡан ағып төшкән.* Д. Юлтый. **[Аяҡҡа] ҡан төшөү** [аяҡтағы] ҡан тамырҙары киңәйеү. *[Мәғфүрә:] Гөлйөҙөм килен, һин бынау ауыр аяҡлы көйөңә йонсойһоң. Күп йөрөгәс, аяғыңа ҡан төшөп китер әле.* Һ. Дәүләтшина. **Ҡан аҙлығы** *йәки* **аҙ ҡанлылыҡ** ҡанда ҡыҙыл ҡан бөртөктәренең тейешленән аҙ

булыуы. **Ҡан алдырыу** дауалау маҡсатында тамырҙан ҡан ағыҙыу. **Ҡан баҫымы** ҡандың ҡан тамырына һыҡкан баҫым көсө. *Артериаль ҡан баҫымы. Түбән ҡан баҫымы.* ■ *[Врач:] Ҡан баҫымың бик юғары, һеҙҙә гипертония, һис тотҡарлыҡһыҙ, сара күрергә, дауаланырға кәрәк.* С. Кулибай. **Ҡанға батыу** 1) ҡанға бик ныҡ буялыу. *Ҡанға батып һуғышыу;* 2) *күсм.* кеше үлтереп ҡан ҡойоу. **Ҡанға сәсәү** күп ҡан аҡкандан хәлһеҙләнеү. *Бер йәш һылыу ҡанға сәсәп ауҙы, ауҙы, каштан һинең төбөңдә.* М. Кәрим. **Ҡанға туҙыу** *ҡар.* **ҡанға батыу 1. Ҡан сабыу** тамырҙы ҡырҡып, ҡан ағыҙыу. *Ҡараһаҡал батыр ҙа беләгенән ҡан сабып, иле алдында ант бирғән.* «Ҡараһаҡал». **Ҡан сире** танауҙан ҡан килтерә торған ауырыу. **Ҡан тамыры** тәндәге ҡан йөрөй торған юл. **Ҡан тибеше** 1) ҡан йөрөшө; 2) *күсм.* бер-бер нәмәнең тормош барышы; тын алышы. *Тыуған ерем ҡосағымда һымаҡ, уның ҡан тибешен тоймаҫҡа мөмкин түгел.* М. Кәрим. **Ҡан һауыу** эстән ҡан тамыры өҙөлөп, берәй ергә ҡан эркелеү, һарҡыу. *Йөрәккә ҡан һауыу. Мейегә ҡан һауыу.* **Ҡан ялатыу** кешенең ауыҙын, моронон ҡанға туҙҙырыу. *Ҡан ялата һуғыу.* **Ҡан ятыу** ҡан тамырының тибеше туҡтау. **Ҡара ҡан** вена ҡаны. **Ҡыҙыл ҡан** артерия ҡаны. **Түл ҡаны** бала тапҡанда ҡойолған ҡан. **Яман ҡан** *һөйл.* боҙоҡ, сирле ҡан (был осраҡта халыҡта дауалау өсөн һөлөк һалалар, ҡан алдыралар). / *с. мәғ.* Ҡыҙыл төҫтөң айырым төҫмөрөн белдерә. *Ҡан ҡыҙыл.*

**2.** *күсм.* Яуҙа булған һәләкәт; үлем. *Изге ҡан.* ■ *Арыҫландар үҙ ерен залимдарҙан тапатмаҫ, тапайым тип атлаһа, башҡорт ҡаны атлатмаҫ.* Ш. Бабич. **Ҡанға һыуһау** кеше үлтерергә ҡаныҡыу. *Бер-берен ҡыҙғанмаған, ҡанға һыуһаған әҙәм балалары һуғышты.* М. Ғафури. **Ҡан дарьяһы** (*йәки* **диңгеҙе**) һуғышта түккән күмәк ҡан, иҫәпһеҙ ҡорбан. *Кем өсөн баштар киҫеп, ағыҙҙылар ҡан дарьяһын.* Т. Йәнәби. **Ҡан ҡойоу** кеше үлтереү. *Тыуған ерем, һинең өсөн .. ерҙә булған күпме ҡан ҡойоу.* Ш. Биҡҡол. **Ҡан ҡойош** һуғыш арҡаһындағы ҡырылыш, үлтереш. *Һәр саҡ тыныс булһын тормош. Булмаһын һис ҡан ҡойош!* С. Әлибаев.

**3.** *күсм.* Яҡын туғанлыҡ; нәҫел. *Ҡан бәйләү.* ■ *[Рәхимә:] Баш һалып килһә, ағаһы ла ситкә ҡаҡмаҫ. Ул [Айбулат] беҙҙең үҙ ҡаныбыҙ бит.* Һ. Дәүләтшина. **Ҡан ҡатышыу** ҡоҙа-ҡоҙағый булып, туғанлашыу. *[Үмәр:] Кеше шикелле кешеләр менән ағай-эне булып, ҡан ҡатышҡас, һыр биреп, тартынып тороп булмаҫ инде.* Һ. Дәүләтшина.

**4.** Айырым ҡылымдарҙың мәғәнәһен көсәйтә. *Ҡан биҙрәү. Ҡан илау. Ҡан ҡайғырыу. Ҡан ҡалтырау.* ■ *Ҡан ҡыҙарҙы бөтә һыу өҫтө.* Т. Арслан. *Ҡыҙыл гәскәр унда ҡан талаша аҡ эттәрҙе илдән ҡыуырға.* Б. Ишемғол.

♦ **Ауыҙға [ҡара] ҡан тулыу** *йәки* **ауыҙ тулы ҡан булыу** *ҡар.* **ауыҙ. [Бер] ҡалаҡ** (*йәки* **тамсы**) **ҡан ҡалғанса** һуңғы сиккә, аҡтыҡ мөмкинлеккә тиклем. *Бер ҡалаҡ ҡаны ҡалғанса һуғышыу.* **Битендә ҡаны юҡ** ояты юҡ, намыҫы юҡ. **Йөрәк ҡаны** *ҡар.* **йөрәк. Күҙҙе ҡан баҫыу** асыу йәки ҡомар менән ярһыу. *Һунар ҡомары менән күҙен ҡан баҫҡан эт, бауын ыскындырып, бер генә «һөс» тиеү менән .. алға атыла.* Д. Юлтый. **Ҡанға һеңеү** тәбиғәткә, ғәҙәткә инеп, бер сифатҡа әйләнеү. *[Абдулла] һәр эште еренә еткереп эшләргә өйрәнде. Тора-бара был уның ҡанына һеңеп, тормош ҡағиҙәһенә әүерелде.* **Ҡанды боҙоу** үртәнеү; үртәндереү. *Ирештереп баланың ҡанын боҙалар. Дөрөҫлөктө табыу өсөн беҙҙең заманда ла күп ҡан боҙорға тура килә.* Д. Исламов. **Ҡанды йыуыу** түгелгән ҡандың ҡонон ҡайтарыу; үс алыу. *Илен яҡлап яу сапҡан, ерен һаҡлап дан тотҡан, яраланған батырҙың ҡанын йыуған саҡ булыр* (Ҡобайырҙан). **Ҡанды ҡыҙҙырыу** кешене ҡуҙғытып ярһытыу. **Ҡан йотоу** ауыр хәсрәт, ғазап кисереү. **Ҡан кибеү** ғазап-хәсрәттән тәҡәт бөтөү.— *Ҡан кипкәйне, йөрәк асыу менән ҡабарғайны, бөгөн бер аҙ эсем бушап ҡалды.* Д. Юлтый. **Ҡан ҡөйөү** бик ныҡ сарсау. **Ҡан ҡайнау** 1) ярһып, тоҡанып китеү; 2) дәрт инеү, елкенеү. **Ҡан ҡарайыу** *шул уҡ* **йән ҡарайыу** (*ҡар.* **йән**). *Асыуланып ҡаным ҡарайғанда, белә алмайым нимә эшләргә.* Б. Вәлит. **Ҡан ҡасыу** ап-аҡ булып ағарыныу. **Ҡан ҡороу** ябығып, һарғайып кибеү. *Йүнле тамағы туймай ҡаны ҡороған имсәк бала .. йоҡлар-йоҡламаҫ булып ыңғырашып ята.* Ғ. Дәүләтшин. **Ҡан ҡыҙыу** нимәгәлер үртәнеп ярһыу. *Мулланың ҡаны ҡыҙҙы. Йөрәге урғып ҡайнай башланы.* Ш. Шәһәр. **Ҡан сүп** күҙгә төшә торған ҡыҙыл ҡылау. **Ҡан талашыу** *ҡар.* **талашыу. Ҡан таралыу** тән яҙылыу.— *Бер аҙ йөрөштөрөп алайыҡ, ҡан таралырға яҡшы булыр.* М. Тажи. **Ҡан ташлау** *диал. ҡар.* **сығыулау 1. Ҡан ташыу** ныҡ ҡыҙышыу, ярһыу.— *Ҡара йөрәк [Чемберлен], беҙгә ҡарап ҡаның ташамы?* Ғ. Мәсғүт. **Ҡан төйөлөү** аңғармаҫтан һуҡҡанда йәки ҡыҫҡанда ҡарайып сығыу. **Ҡан түгеү** яуҙа ҡатнашыу, яраланыу. *Бәхет, шатлыҡты Ватан яулап алды ҡан түгеп.* Р. Ниғмәти. **Ҡан эсендә йөҙөү** үлеш, ҡырылыш, һуғыш эсендә йөрөү. **Ҡан эсеү** иҙеп, талап, бик ныҡ йәберләү. *Арыҫландай ирҙәрҙе йыуаш ҡуйҙай итер хан, .. боғазламай эсер ҡаныңды, үлтермәй алыр йәнеңде* (Ҡобайырҙан). **Ҡаны ҡатҡыр** ҡарғағанда әйтелә. **Ҡан йүгереү** ҡыҙарыу (тәнгә ҡарата). *Биткә ҡан йүгерҙе. Иренгә ҡан йүгерҙе.* **Ҡуян ҡаны кеүек** ҡара-ҡыҙыл төҫтә (сәйгә ҡарата). *Сәйҙәр яһай ҡарсыҡ, ҡалай ҡуйы, ҡып-ҡыҙыл ул ҡуян ҡанындай.* Ғ. Дәүләтшин. **Ҡырҡһаң ҡаны сыҡмаҫ** *ҡар.* **ҡырҡыу**[1]. **Саф ҡан** 1) таҙа тоҡом; 2) *күсм.* керһеҙ күңел. **Сиртһәң ҡаны сығыр[ға тора]** һимеҙ, ҡыҙара бүртеп торған кешегә ҡарата әйтелә. *Тимербай урта кәүҙәле егет, бик таҙа, мускулдары үрелеп-үрелеп тора, сиртһәң ҡаны сығыр.* С. Агиш. **Таҙа ҡан** *ҡар.* **саф ҡан 1.**

**ҠАН**[2]: **ҡан заманындағы** *һөйл. шул уҡ* **хан заманындағы** (*ҡар.* **хан**).

**ҠАНА** *ымл.* **1.** Берәй эшкә өндәү, ҡеүәтләүҙе белдерә; йә. *Ҡана әле.* ■ *Әй, ирекле, наҙлы һеңлем, тор йоҡоңдан, тор, ҡана!* Д. Юлтый. / Берәй эшкә саҡырыуҙы, әйҙәләүҙе белдерә; әйҙә. *[Мәүлет бай:] Ҡана, тиҙерәк эште бөтөрөп алайыҡ. Хәҙер төн уртаһы уҙып бара, былай ярайма ни?* Ғ. Дәүләтшин. / Берәй эшкә ыңғайлыҡ, теләк белдергәндә аңлата; йә, булмаһа.— *Ҡана, уҙем бара һалып, таһырлатып алып киләйем.* Б. Бикбай.

**2.** Берәй нәмә һорағанда әйтелә; ҡайҙа, бир әле. *Ҡана, билеттарығыҙҙы бирегеҙ әле бында.* И. Насыри. / Берәй эшкә, ярҙамға рөхсәт һорағанда әйтелә; бир әле. *Урал ҡыҙҙы йәлләп китеп: «Ҡана, һылыу, тогоңдо үҙем күтәрәйем»,— ти[гән].* «Урал батыр».

**ҠАНАТ** *и.* **1.** Төрлө ҡош, бөжәк һәм ҡайһы бер һөтимәрҙәрҙең осор өсөн хеҙмәт иткән ағзаһы. *Күбәләк ҡанаты. Ҡош ҡанаты. Себен ҡанаты.* ■ *Ситәнгә менеп, күршеләрҙең әтәсе ҡанат ҡағып, ҡысҡырып ебәрә, ҡайҙалыр колондар кешнәгәне ишетелә.* Ғ. Ғүмәр.

**2.** Самолёттың ике яғындағы һауаға күтәрә торған яҫылыҡтар. *Уң яҡ ҡанат. Һул яҡ ҡанат.* / Уҡтың ҡойроғо, ҡаурый ҡуйылған осо. *[Алпамышаның] уғының башағы алтындан, ҡанаты көмөштән, ти.* «Алпамыша».

**3.** Төрлө ҡорал-ҡорамалдың әйләнмәле таҡтаһы. *Бал ҡыуғыс ҡанаты. Лобогрейка ҡанаты. Пропеллер ҡанаты.* ■ *Ел тирмәне елпеү елдәргә ҡанаттарын болғап әйләнә.* Ғ. Амантай. *[Комбайнер] ергә төштө һәм .. машинаның алдына сыҡты, әүернә ҡанатын түбән төшөрөп сүкәйеп ултырҙы.* Ә. Вәли. / Йондоҙҙоң (3 мәғ.) бер тарбағы; мөйөш. *Биш ҡанатлы йондоҙ.*

**4.** Балыҡтарҙың йөҙөү өсөн ҡулайлашҡан ағзаһы; йөҙгөс. *Ҡыҙыл ҡанатлы балыҡ.* ■ *Агиҙелкәйҙәрҙе урләгән ҡанаттары ҡыҙыл күк бәрҙе* (Халыҡ йырынан).

**5.** Быҫраҡ сәсрәмәһен өсөн, тәгәрмәс өҫтөнә ҡуйылған япма. *Велосипед ҡанаты.*

**6.** Тирмә кирәгәһендә стенаны тәшкил иткән өлөштәрҙең береһе. *Алты ҡанатлы тирмә. Ун ике ҡанатлы тирмә.* ■ *Тирә-яғы вағыраҡ тирмәләр менән уратылып, ҙур майҙан ҡалдырылған урталыҡта ун биш ҡанатлы оло аҡ тирмә ҡоролған.* Ғ. Хөсәйенов. / Төрлө ау ҡоралдарының ике яҡҡа киреп ҡуйылған өлөшө. *Мурҙа ҡанаты. Ҡанат ҡуйыу.* ■ *Теге ултырған бағаналар буйлатып ҡанат тотабыҙ. Ҡанат һыуҙың ағышын икенсе яҡҡа бороп ебәрергә ярҙам итә.* М. Тажи. *Инде һәйбәт кенә һөҙөп барғанда, Юламаныбыҙ ҡапыл .. ҡанатты ташлап, ах-вах килеп, ярға йөҙә башланы.* Ф. Иҫәнғолов.

**7.** Теҙелгән сафтың ике яҡ осо; фланг. *Командир ротаның уң ҡанатынан башлап һул ҡанатына килде.* А. Таһиров.

**8.** *күсм.* Тормоштағы, эштәге ярҙамсы; таяныс, терәк. *[Нигмәтулла — Ҡолсобайға:] Татыу йәшәйек. Ихлас күңелдән әйтәм. Бер-беребеҙгә ҡанат булайыҡ.* Я. Хамматов. *Тау яланым, урман йылғам, һиңә бағам, ҡанат алам.* С. Ҡулибай. **Уң ҡанат** иң яҡын, иң ышаныслы дуҫ, ярҙамсы. *Яңғыҙ атым — уң ҡанатым, әй туры ат, тарт һабанды, артта ҡалһын киң бураҙна ялтырап.* Б. Ишемғол.

♦ **Ике ҡанат бер ҡойроҡ** берәй эшкә ҡушҡуллап риза булғанды белдергәндә әйтелә. *Мин ни, Әбделнәгим бабай менән йөрөүгә ике ҡанат бер ҡойроҡ инде. Яткан еремдән һикереп торҙом.* Н. Мусин. **Ҡабыҡ ҡанат** *ҡар.* **ҡабыҡ. Ҡанат аҫтына алыу** кемделер яҡлау, ҡурсыу. *[Түрә], бактиһәң, үҙе иҫкене ҡыуыусы, хәллерәк кешеләрҙе ҡанат аҫтына алыусы аумаҡай бер кеше икән.* Б. Бикбай. **Ҡанат йәйеү** 1) таралып, ҡаплап алыу. *Ҡараңғылыҡ ергә ҡанат йәйә, уттар ҡабына.* Х. Кәрим; 2) киң үҫеш алыу. *Элек башланып ҡына ҡуйылған тау промышленносы .. ҡанат йәйҙе.* «Совет Башҡортостаны», 1969, 19 февраль. **Ҡанат ҡайырылыу** 1) терәктән, таяныстан яҙыу. *Айырылғандың ҡанаты ҡайырылған, тиҙәр;* 2) көс, дәрт һүнеү. **Ҡанат осороу** *этн.* кем кейәү булырын алдан белеү өсөн көҙгө ҡаҙ өмәһе ваҡытында ҡаҙ йөнө осороу (кем өйөнә барып төшһә, кейәү, йәнәһе, шул өйҙән була). *Шаулап ҡаҙ өмәләре үтте, ҡыҙҙар йырлай-йырлай ҡанат осорҙо, ҡанаттары, йөрәктәрҙе елкендереп, ауыл өҫтөнә күтәрелде.* Р. Низамов. **Ҡанатҡа теҙеү** йылым ултыртыу. **Ҡанатты киҫеү** (*йәки* **ҡыйыу**) ауыр хәлдә ҡалдырыу, сараһыҙ итеү. **Һомай ҡанат** бәхет килтергән хәл, осраҡ тураһында. *Мөхәббәт әруахына сәләм һала өммәткә ғасый булған һомай ҡанат.* Аҡмулла.

**ҠАНАТАЯҠЛЫЛАР** *и.* Ҡусҡарҙар ғаиләһенә ҡараған экәм-төкәмдәр төркөмө.

**ҠАНАТЛАНДЫРЫУ** *к.* Рухландырыу, дәртләндереү. *[Хикәйәм журналда] баҫылып сыҡты. Был хәл мине ҡанатландырып ебәрҙе.* Ш. Насыров. *Беҙҙең йәшлекте тәүге биш йыллыҡтарҙың ялҡыны ҡанатландыр[ҙы].* Д. Исламов.

**ҠАНАТЛАНЫУ** *к.* **1.** Ҡанат сығыу, ҡанат үҫеү, оса башлау. *Ҡырмыҫҡа ҡанатланған.* ■ *[Абыстай:] Ошо осорҙа көн дә һаташам. Әле балыҡ тотам, әле .. ҡанатланып һауаға осам.* Т. Хәйбуллин. *Сыйырсыҡтар балаларын осорҙолар кисә, ҡанатланырға ҡоштарға бер ай ваҡыт етә.* Н. Нәжми. / Елеп сапҡан атҡа ҡарата. *Ҡанатланып осҡан бурылды ҡыуып етеү ҡайҙа ул.* Н. Иҙелбай. / *күсм.* Буйға үҫеп, балиғ булыу. *Ғүмер бигерәк тиҙ үтә инде! Ҡыҙҙарының ҡанатланғанын Тайба әбей һиҙмәй ҙә ҡалды.* Х. Мохтар.

**2.** *күсм.* Нимә менәндер рухланып дәртләнеү, йөрәкһеү. *Күңел ҡанатлана. Ҡанатланып эшкә тотоноу.* ■ *Мин китеү дәрте менән ҡанатланған булһам да, нисектер, ауылды .. ташлап киткем килмәй.* Ғ. Ғүмәр. *Ҡанатландым, яңы көстәр алдым хеҙмәт диңгеҙендә йөҙөргә.* С. Ҡудаш.

**ҠАНАТЛЫ** *с.* **1.** Ҡанаты булған, оса торған. *Ҡанатлы ҡош. Ҡанатлы бөжәктәр.*

**2.** *күсм.* Осҡан ҡоштай етеҙ. *[Нурый:] Ә мин әйтәм, атым ҡанатлы, абруйым һанатлы булһын, тием.* А. Таһиров.

**3.** *күсм.* Юғары илһамға, дәртләндергес хискә бай. *Ҡанатлы хыял.* ■ *Ҡарт мастер ҡанатлы уйҙар менән тулҡынланып .. сығып китте.* М. Хәйҙәров.

♦ **Ел ҡанатлы** бик етеҙ. *Ел ҡанатлы күбәләк.* **Фәрештә ҡанатлы** бер гонаһһыҙ; саф.

**ҠАНАТЫУ** *к.* Йәрәхәтләп ҡанын сығарыу. *Аяҡты ҡанатыу. Танауҙы ҡанатыу. Һуғып ҡанатыу.* ■ *Кем дәһанымды тешләп ҡанатты? Кем һуң ул?* Ш. Бабич.

**ҠАНАТЫШЫУ** *к. урт. ҡар.* **ҡанатыу.** *Мәрәкәгә әүәҫ .. малайҙар, ошонда ҡыҙыҡ табып. көрмәкләшеп, танау ҡанатышып тарала.* Ф. Иҫәнғолов.

**ҠАНАУ** *к.* Йәрәхәтле урындан ҡан сығыу, ҡан ағыу. *Танау ҡанау.* ■ *Ҡулдәктә ҡандар күрен-*

*де, караһам, түш буй-буй булып һыҙырылған, канаған.* Д. Юлтый.

● *Йәтимдең ауыҙы ашка тейһә, танауы канай.* Мәҡәл. *Биргән бейгә яраған, ауыҙы-башы канаған.* Мәҡәл.

**ҠАНҒЫҘЫУ** *к. диал.* Ҡандырыу. *Асыу канғыҙыу. Йоко канғыҙыу.*

**ҠАНДАҒА** *и. диал.* Ҡанъяға.

**ҠАНДАЙ** *а. һөйл. кар.* **калай**[2]. *Ҡара, беҙҙең кашка быҙау, кара, кандай уйынсак! Һикерә йөрөп уйнар ине, уңайһыҙлай муйынсак.* Ғ. Амантай.

**ҠАНДАЛ** [*рус.* кандалы < *гәр.*] *и.* Тотҡондоң ҡул-аяғына һала торған ҡоршау. *Ҡул-аяҡтарында сыңйыр кандал, ятап менән ристан баралыр* (Халыҡ йырынан).

**ҠАНДАЛА** *и.* Кеше ҡаны менән туҡланыусы паразит бөжәк. *Ҡандала менән бөрсә талауға уяныр киткән Вәлиҙең колағына ишек асылған тауыш ишетелгән кеүек булды.* С. Ханов. **Ҡыр ҡандалаһы** ҡаты ялпаҡ ҡанатлы, һаҫыҡ бөжәк.

♦ **Ҡандала үләне** *кар.* **үлән.**

**ҠАНДАШ** *и. диал.* **1.** Ҡәрҙәш.

**2.** Ҡарындаш.

**ҠАНДЫРЫУ** *к.* **1.** Кәрәкле бер нәмәгә туйындырыу. *Бөркөп яуҙы ямғыр киң кырҙарға һыуһап торған ерҙе кандырып.* С. Ҡудаш.

**2.** Теләкте, тойғоно ҡәнәғәтләндереү. *Асыуҙы кандырыу. Йоконо кандырыу. Танһыкты кандырыу. Үсте кандырыу. Һыуһынды кандырыу.* ■ *[Тауыктар] кыш буйы тибә алмай кысып торған тырнактарының кысыуын кандырғылары килгәндәй, көлдән тиреҫкә, тиреҫтән көлгә йүгерәләр.* Ғ. Дәүләтшин. *Һөйөүең дәртте кандырыр кеүек, ә якын барһам яндырыр кеүек.* Р. Назаров.

**ҠАНЕСКЕС** *с.* Әҙәм ҡанын ҡойоусы, кеше үлтереүсе; ҡанхур. *Ҡанескес батша.*

**ҠАН-ЙӘШ** *и. йыйн.* Әсе, хәсрәтле күҙ йәше. *Батшаның башын кыркыр вакыт еткәс кенә, өсөнсө кыҙы кан-йәш түгеп: «Атайымды, зинһар, үлтермә!» — тип Ҡыҙрастың аяғына йығыла* (Әкиәттән).

**ҠАНЛАНЫУ** *к.* Ҡанға буялыу, ҡан тейеү. *Башы канланған Сабир бәлтерәп ултыра.* Б. Бикбай.

**ҠАНЛАУ** *к.* Ҡанға буяу, ҡан тейҙереү. *Ҡулын кыркып, күлдәген канлап бөткән.*

**ҠАНЛЫ** *с.* **1.** Ҡанланған, ҡанға буялған. *Ҡанлы бысак. Ҡанлы күлдәк. Ҡанлы кәүҙә.* ■ *Ҡанлы командирҙы алып, лазаретка сапты автобус.* Р. Ниғмәти. / Ҡан ҡатыш, ҡан менән булған. *Ҡанлы төкөрөк.* ■ *Алмаларҙан тамған канлы һуттан ике кош яралып, алма ағасы башына ике оя яһағандар, ти* (Әкиәттән). / Ҡан һауған. *Уның .. каймакланған канлы күҙҙәре .. кот оскос булып күренде.* Д. Юлтый.

**2.** Күп ҡорбан, үлеш килтергән. *Ҡанлы көн. Ҡанлы бәрелештәр. Ҡанлы һуғыш.* ■ *Һөйлә тарихыңдан, яуҙарыңдан, һөйлә канлы башкорт болаһын.* Ш. Бабич. *Күп иркәйҙәр ятып калды, кайта алманы канлы яуҙарҙан* (Халыҡ йырынан).

♦ **Аҙ ҡанлылыҡ** организмда ҡандың тейешле кимәлдән кәм булыуынан килгән сир. **Йылы ҡанлылар** *зоол.* тән йылыһы тотороҡло булған, тышҡы шарттар тәьҫирендә үҙгәрмәй торған хайуандар. **Ҡайнар ҡанлы** дәртле, ярһыу. **Ҡанлы болаҡ** *диал.* ҡан ҡойош, үлтереш. **Ҡанлы йәкшәмбе** *тар.* 1905 йылдың 9 ғинуары, батша хөкүмәтенең Петербургта эшселәрҙең тыныс демонстрацияһын аттырған көн. **Ҡанлы йәш** ауыр ҡайғы, хәсрәт кисереүгә, әрнеүгә ҡарата әйтелә. *Ҡанлы йәш менән илау. Ҡанлы йәш түгеү.* ■ *Ил күҙенән канлы йәш ағыҙған Ҡолой кантон менән Ермолай* (Халыҡ йырынан). **Ҡом ҡанлы** ҡаты күңелле, шәфҡәтһеҙ. *[Көнһылыу:] Бер аҙ ғына кыҙғанһаңсы беҙҙе?! Юк, ул — таш йөрәкле, ком канлы кеше, ишетергә лә теләмәй.* Б. Бикбай. **Ҡыҙыу ҡанлы** ярһыу тәбиғәтле. *Үҙ улының ауыҙынан һүҙ ишеткәс, былай ҙа кыҙыу канлы Сәмәр хан бөтөнләй которона* (Әкиәттән). **Тулы ҡанлы** күп нәмәне эсенә алған, бай йөкмәткеле, күп яҡлы. *Тулы канлы образ. Тулы канлы тормош.* ■ *Замандыбыҙҙың актуаль талаптарына яуап бирә алған тулы канлы әҫәрҙәр кәрәк беҙгә.* М. Ғәли. **Тулы ҡанлылыҡ** тулы ҡанлы булыу сифаты. **Һалҡын ҡанлы** тиҙ генә ярһып, ҡыҙып китмәгән, ауыр тәбиғәтле. *Һалкын канлы кеше.* **Һалҡын ҡанлылыҡ** һалҡын ҡанлы булыу сифаты. **Һалҡын ҡанлылар** *зоол.* тән йылыһы тышҡы шарттар тәьҫирендә үҙгәреп торған, тән йылыһы тотороҡло булмаған хайуандар (мәҫ. тәлмәрйен, йылан, селәүсен һ. б.).

**ҠАНСА** *һор. а. һөйл.* **1.** Берәй нәмәнең һанына ҡарата бирелгән һорауҙы белдерә; нисә. *Ҡанса көн үтте?*

**2.** Билдәһеҙ һан, күләм, ваҡытҡа ҡарата әйтелә; күпме. *Ике батыр гәжәпһенеп карап торҙо,.. канса әҙәм бар икәнен һанап торҙо.* «Бабсаҡ менән Күсәк». / Берәй нәмәнең бик күп булғанына баҫым яһағанда әйтелә; күпме, ни хәтле. *Ҡанса быуат Ырғыҙ шулай алыҫтарға алкынған.* Р. Ғарипов. *Ҡанса йөрәк парланышып, яҙмыштары бергә төйнәлгән.* Р. Бикбаев.

**3.** *р. мәғ.* Эш-хәрәкәттең бик дауамлы йәки күп тәкрарлы икәнен билдәләй; ни хәтле, нисәмә тапҡыр. *Ҡылдарың наҙлы, наҙың мәгсүм ауазды аңкыта, канса тыңлам та туя алмайым.* Ш. Бабич.

● *Бакырҙы канса йышһаң да алтын булмаҫ.* Әйтем.

**ҠАНСАЙ** *и. диал.* Кәнтәй.

**ҠАНСЫҠ** *и. диал.* Кәнтәй.

**ҠАНСЫРА** *и. диал.* Этеш.

**ҠАНТАР** *и.* Ҡыҫҡа теҙген.

**ҠАНТАРЫУ** *к.* Аттың теҙгенен ҡыҫҡартып бәйләү. *Сөнгәт атты туғармай кантарып куйҙы.* Ғ. Дәүләтшин. / Һимеҙ атты сыныҡтырыу өсөн тәнгеләккә ашатмай-эсермәй башын күтәртеп бәйләп ҡуйыу.

**ҠАН-ТИР** *и. йыйн.* Ауыр эшкә һалынған ҙур көс. *Ҡан-тир түгеп эшләү.*

**ҠАНТҮШ** *и. кар.* **ҡыҙылтүш.**

**ҠАНУН** [*гәр.*] *и.* **1.** Дин тотоу һәм көн итеү тәртибен билдәләгән дини ҡағиҙә. *Шәриғәт канундары.* ■ *Мохтар Мутин кара груһ динселәр ауыҙынан сыға торған һүҙҙәр һөйләй: «Ни кәҙәре мосолман бөйөк ислам канундарын химая кылырға әҙер тора»,— ти.* З. Шәрҡи.

**2.** Тормош-көнкүрештә нығынып, бер тәртипкә әйләнеп киткән ғәҙәт, йола. *Беҙҙең һәр көнбөҙ үҙгәрешһеҙ бер ҡанун буйынса китеп бара ине.* М. Ғафури.

**3.** Ниҙеңдер башҡарыу рәүешен билдәләй торған тәртип, дөйөм ҡабул ителгән ҡағиҙә, норма. *Йола ҡанундары. Шиғыр ҡанундары.* ■ *Йәш көстәрҙе сәхнә ҡанунына өйрәтеү өсөн режиссер кәрәк.* Д. Юлтый. *Руда йөкмәп йөрөй вагонеткалар. Һәр бер нәмә үҙенең хәрәкәтендә, һәммәһенә махсус ҡанун бар.* Б. Вәлит.

**ҠАНУНЛАШТЫРЫУ** *ҡ.* Ҡанун итеп индереү, ҡағиҙәгә әйләндереү.

**ҠАНУНЛАШЫУ** *ҡ.* Ҡанун хәленә килеү; бер тәртипкә һалынып, ҡағиҙәгә әйләнеү. *[Шағир] башҡорт шиғырының .. ҡанунлашҡан формалары менән генә ҡәнәғәтләнмәй, уны түрләндереү .. хәстәрлегән күрә.* Ғ. Хөсәйенов.

**ҠАНХУР** *с.* Әҙәм ҡанын ҡойоусы, ҡанескес. *Ҡанхур дошман.*

**ҠАНҺЫҘ** *с.* **1.** Тәнендә ҡаны булмаған, ҡаны юҡ. *Ҡанһыҙ тереклектәр.*

**2.** *күсм.* Ҡаты бәғерле, шәфҡәтһеҙ. *Тәфтиләүҙәй ҡанһыҙ булыр микән, һуйҙы илде ҡырағай йәнлек күк* (Халыҡ йырынан). // *Күрҙегеҙ бит, ул ҡанһыҙҙар ярлының ете-һигеҙ йәшлек сабыйҙарынан үс ала.* Б. Хәсән.

**ҠАНҺЫҘЛАНЫУ** *ҡ.* **1.** Берәй сирҙән йәки күп ҡан юғалтыуҙан ҡан әҙәйеү. *Уның [Тайморзиндың] сәләмәтлеге ҡаҡшаған, .. ныҡ ябығып, ҡанһыҙланып ҡалған.* М. Тажи.

**2.** *күсм.* Ҡаты бәғерлегә, шәфҡәтһеҙгә әйләнеү; шәфҡәтһеҙләнеү.

**ҠАНҺЫҘЛЫҠ** *и.* Аяуһыҙлыҡ, шәфҡәтһеҙлек. *Ҡанһыҙлыҡ күрһәтеү.*

**ҠАНҺЫРАТЫУ** *ҡ.* Ҡанын күп ағыҙып, ҡанһыҙландырыу. *Кешене ҡанһыратыу.*

♦ **Йөрәкте ҡанһыратыу** күңелде борсоп әрнетеү (берәй ауыр хискә ҡарата).

**ҠАНҺЫРАУ** *ҡ.* **1.** Күп ағыуҙан ҡан әҙәйеү; ҡанһыҙланыу. *Минең йәшемдә атайым .. ҡаты яранан ҡанһырап һуңғы һулышын алған.* Р. Низамов. / *күсм.* Аслыҡ, бөлгөнлөк кисереп, күп ҡорбан биреп, хәлһезләнеү. *Халҡым! Һиңә нисек һаран тарих данды былай йомарт өләшкән? Ҡанһыраған көйө ни көс табып, еңеп сыҡтың тиңһеҙ көрәштән?* Р. Бикбаев.

**2.** *күсм.* Аяуһыҙланыу, шәфҡәтһеҙләнеү. *Үлемгә һыуһап, ҡанһырап осҡан немец самолеттары баш өҫтөндә көнө-төнө бомба яуҙырҙы.* К. Кинйәбулатова. *[Урал — Шүлгәнгә:] Ҡанһыраған йөрәгең яҡшылыҡҡа баҙа алмаҫ.* «Урал батыр».

**ҠАНҺЫУ** *с.* Ҡан төҫөндәге, ҡан кеүек алһыу. *Беҙҙә бына яҡын дауылдарҙан хәбәр биреп ҡанһыу көн бата.* Х. Ҡунаҡбай.

**ҠАНҺЫУЛАУ** *ҡ.* Ҡанһыу төҫкә инеү, алһыуланыу. *Күк ситтәрен үртәп ҡыҙыл нурға ҡояш сыға көлөп, ҡанһыулап.* С. Ҡудаш.

**ҠАНЪЯҒА** *и.* Төрлө нәмә бәйләү өсөн эйәрҙең ҡапталына тағылған ике армытлы ҡайыш бау. *Йомағол ут яҡты, Рәзилә уның эйәренең ҡанъяғаһына бәйләнгән сәйнүкте алып һыу килтерҙе лә, сәй ҡайнатырға күйҙы.* Н. Мусин.

♦ **Ҡанъяғаһы ҡаты** күмәк һунарҙа, ҡанъяғаһына йәнлек аҫыр нәүбәте еткәндә, йәнлек табылмай йәки алдырмай аптырата торған кешегә ҡарата әйтелә.

● *Сөймәгә бирһәң, ҡарсыға бүр — ҡанъяғаңды буш итмәҫ.* Мәҡәл.

**ҠАНЪЯҒАШ** *и. диал.* Егет яғынан килгән ҡоҙалар тарафынан ҡыҙҙың ағаларына бүләк рәүешендә аҡса һалыу йолаһы.

**ҠАНЪЯУЛАНЫУ** *ҡ.* Һуғыш, янъял сығарыу.— *Нимә, ҡанъяуланып, унда-бында һуғылып йөрөйһөң?* «Ҡуҙыйкүрпәс менән Маянһылыу».

**ҠАНЫҒЫУ** [1] *ҡ. һөйл.* Ҡан һауып шешенеү. *Ҡулым бер ҙә дөрөҫ яҙмай ҡаныҡҡанға күҙҙәрем* (Бәйеттән).

**ҠАНЫҒЫУ** [2] *ҡ.* **1.** Көслө теләк, ҡомарлыҡ күрһәтеү. *Ҡаныҡып мал йыйыу.* ■ *Ҡаныҡып эсер инем татлы шишмәһенән белемдең.* Ғ. Мәсғүт. / Ныҡ иғтибар итеү, артыҡ мауығыу. *Ауылда биш Әхмәҙи бар. .. Ни өсөн «Әхмәҙи» тигән исемгә ҡаныҡҡандарҙыр, уныһын белеү ҡыйын хәҙер.* Ж. Кейекбаев.

**2.** Берәүҙе дошман күреп, үсләшеп ҡаҙалыу, хасланыу. *[Оләсәһе:] Бисәң дә шул орсоҡтай балаға ҡаныҡҡан. Ниткән туҡмау ул гел генә.* Ғ. Ғүмәр. *[Һунарсы] бүре ояһын тап итеп, өс балаһын алып ҡайтҡайны, шунан бирле ҡаныҡты бит йыртҡыс.* Р. Солтангәрәев.

**3.** Бәйләнеп йөҙәтеү. *[Мансур:] Управляющий ҡаныҡты бит, «һинең кеүек йәш, энергиялы инженер бында ла кәрәк» тип, тәки алып ҡалды.* Ш. Янбаев.

● *Асыҡҡандан ҡаныҡҡан яман.* Әйтем. *Ҡаныҡҡан ҡатын ҡырлыҡты ярма итә.* Әйтем.

**ҠАНЫҠТЫРЫУ** *ҡ. йөкм. ҡар.* **ҡанығыу** [2] 2, 3. *Кешегә ҡаныҡтырыу.*

**ҠАНЫУ** *ҡ.* **1.** Ҡәнәғәтлек алып баҫылыу, бөтөү (ашау, эсеү һ. б. булған теләккә ҡарата). *Һыуһын ҡаныу.* ■ *Ҡунаҡтар ашап-эсеп ҡанғас, хужа ҡатынға ысын күңелдән рәхмәт уҡып таралышалар.* «Алдар менән Зөһрә».

**2.** Ҡәнәғәтлек алып, юйылыу, баҫылыу (уй-тойғо, теләккә ҡарата). *Күңел ҡанғансы ҡарау. Асыу ҡаныу. Танһыҡ ҡаныу. Үс ҡаныу.* ■ *[Уҡытыусы] башы һуҡҡан яҡҡа сығып китә лә, мауҡы ҡанғансы йөрөп ҡайта.* Ж. Кейекбаев. *Алпамыша йоҡоһо ҡаным уяныр китһә, ҡул-аяғы бәйле.* «Алпамыша». *Һөйгән генә йәрем тоғро булһа, һөйөр инем зауҡым ҡанғансы* (Халыҡ йырынан).

**ҠАНЫШ** *и.* Киленгә һыу күрһәткән ҡәйенһеңле.

**ҠАН-ЯУ** *и. йыйн.* Һуғыш, янъял. *Ҡан-яу сығарыу.* ■ *[Ҡыҙ — егеткә:] Егет, һүҙең һүҙ булһын, һиңә антым бирәйем, .. ҡан-яу асмай арала һоҡланғаның бирәйем.* «Аҡбуҙат».

**ҠАҢАЛТЫР** *с.* **1.** Эйелеп-һығылып торған, йоҡа (ҡалайға ҡарата).

**2.** Йоҡа ғына, келәүек (боҙға ҡарата). *Аяҡ аҫты .. төнгө һыуыҡҡа ҡатҡаҡланған. Ҡар һыуҙары [тояҡ эҙҙәрендә] ҡаңалтыр боҙ булып туңған.* Һ. Дәүләтшина.

**ҠАҢҒАҠ** *с.* **1.** Оҙаҡ ваҡыттар яуым-төшөмһөҙ, аяҙ һәм ҡоро булып торған. *Ҡаңғаҡ көн.* // *Ҡаңғаҡҡа тартыу.* ■ *Бөгөн шундай матур*

*каңғак көн. Ул күктең зәңгәрлеге..!* Ш. Бикҡол. **Ҡаңғаҡ ел** ҡоро, һалҡынса ел.

**2.** *и. мәғ.* Аяҡ аҫты туң, ҡоро саҡ. *Көҙгө ҡаңғаҡ. Яҙғы иртәнге ҡаңғаҡ.*

**ҠАҢҒАҠЛАУ** *к.* Ҡаңғаҡҡа әйләнеү. *Көн ҡаңғаҡлап тора, ҡар юҡ.*

**ҠАҢҒЫ** *и. диал.* Ҡалъян.

● *Ҡыҙ бала — ҡаңғыла ятҡан уҡ.* Мәҡәл.

**ҠАҢҒЫЛ** *с.* Ныҡ һимермәй торған, ҡаҡса. *Ҡаңғыл кеше. Ҡаңғыл мал.* ■ *[Фәндәлиф] башына сал йүгергән ҡаңғыл һөйәкле ҡартҡа әйләнә.* Т. Килмөхәмәтов.

**ҠАҢҒЫЛДАҠ** *с.* **1.** Ҡаңғылдап ҡысҡырған. *Ҡаңғылдаҡ ҡаҙын йолҡайыҡ, торҡолдаҡ торнаһын тартайыҡ.* «Заятүләк менән Һыуһылыу».

**2.** Яңғырап торған ҡалын (кеше тауышына ҡарата). *Бабич бик үҙенсәлекле, ҡаңғылдаҡ тауышлы бер кеше ине.* С. Ҡудаш.

**ҠАҢҒЫЛДАТЫУ** *к.* Ҡаңҡ-ҡаңҡ иттереү. *Заятүләк атлы улы ҡаңғылдатып ҡаҙ алды, ти.* «Заятүләк менән Һыуһылыу».

**ҠАҢҒЫЛДАУ** *к.* **1.** Ҡаңҡ-ҡаңҡ итеү, ҡаңҡ-ҡаңҡ килеү. *Һаҙ эсендә бер яңғыҙ ҡаҙ өҙөлөп-өҙөлөп ҡаңғылдай* (Әкиәттән).

**2.** *кӱсм.* Ниҙелер ҡат-ҡат әйтеү, туҡыу. *Сурагол белмәй ҡаңғылдамайҙыр. Ул донъяның әсеһен-сөсөһөн күп татыған.* Т. Хәйбуллин.

**ҠАҢҒЫЛДАШЫУ** *к. урт. ҡар.* **ҡаңғылдау** 1. *Аҡҡоштар ҡаңғылдаша. Ҡаҙҙар ҡаңғылдаша.*

**ҠАҢҒЫРТЫУ** *к.* Ни эшләргә, ни уйларға белмәҫ хәлгә килтереп аптыратыу. *Һорауҙар менән башты ҡаңғыртыу. Кешене ҡаңғыртыу.*

**ҠАҢҒЫРЫҠ** *и.* **1.** Баш ҡаңғыртҡыс шау-шыу, ығы-зығы. *Ҡаңғырыҡ булыр тип, кешене күп йыйманым.*

**2.** *с. мәғ.* Тиҙ генә ҡаңғырып, зиһене таралып барыусан. *Ҡаңғырыҡ кеше.*

**ҠАҢҒЫРЫУ** *к.* **1.** Ни тип уйларға, нимә эшләргә белмәй аптырау. *Азаматов бер нисә көн ҡаңғырып йөрөнө. Ваҡыты менән уға Ирҡәнән башҡа йәшәү мөмкин түгел төҫлө тойола ине.* Ә. Вәли.

**2.** Күп төрлө ығы-зығы менән иҫәңгерәү, буталыу. *Тауыштан баш ҡаңғырыу.* ■ *[Ҡыҙ] ҡасҡан һәм оҙаҡ ҡаңғырып йөрөй торғас, Өфөгә килеп сыҡҡан.* Б. Бикбай.

● *Байҙың ҡатыны үлһә, түшәге яңырыр, ярлының ҡатыны үлһә, башы ҡаңғырыр.* Мәҡәл.

**ҠАҢҒЫРЫШЫУ** *к. урт. ҡар.* **ҡаңғырыу.**

**ҠАҢҒЫТЫУ** *к. ҡар.* **ҡаңғыу**[1]. *Көн ҡаңғытты.*

**ҠАҢҒЫУ**[1] *к.* Ҡаңғаҡҡа әйләнеү; ҡаңғаҡлау. *Көн ҡаңғыны.*

**ҠАҢҒЫУ**[2] *к. диал.* Ҡаңғырыу. *Баш ҡаңғыны.*

**ҠАҢҠ** *оҡш.* Ҡаҙ, аҡҡош кеүек ҡоштар тауышын белдергән һүҙ. *Ҡаңҡ итеү.*

**ҠАҢ-ҠАҢ** *оҡш. ҡар.* **ҡаңҡ-ҡаңҡ.** *Яланда ҡош-ҡорт аҙая. Йылы яҡҡа ҡаңҡ-ҡаңҡ итеп киткән ҡыр ҡаҙҙарының тауышы ла баҫылды.* С. Агиш.

**ҠАҢҠ-ҠАҢҠ** *оҡш.* Ҡабат-ҡабат ҡаңҡ иткән тауышты белдергән һүҙ; ҡаң-ҡаң. *Ҡаңҡ-ҡаңҡ ҡысҡырыу. Ҡаңҡ-ҡаңҡ килеп осоп китеү.*

**ҠАҢҠЫЛДАУ** *к. ҡар.* **ҡаңғылдау.**

**ҠАҢЛЫ** *и.* Бер башҡорт ырыуының исеме.

**ҠАҢТАР** *и.* Көҙгө ҡырпаҡ ҡар миҙгеле. *Ҡараса килмәй көҙ булмаҫ, ҡаңтар килмәй боҙ булмаҫ.* Һынамыш.

**ҠАП**[1] *и.* **1.** Ниҙер һалырға йәтешләп эшләнгән һауыт; ҡумта. *Шырпы ҡабы.* ■ *Сәлих һары ҡағыҙҙан бер әсмуха тәмәке һыйырлыҡ ҡап яһай.* Х. Мохтар. *[Мин] ҡулыма сәғәт һалынған ҡапты алдым.* Н. Мусин.

**2.** Йүкәнән һуғылған ҙур тоҡ. *Мәғфүрәне ҡап тоттороп тиҙәк йыйырға ебәрмәк булдылар.* Һ. Дәүләтшина. / *диал.* Септә.

**3.** Ҙур киндер тоҡ. *Тирмәнгә биш ҡап бойҙай тултырып ҡуйҙым.*

**4.** Мал ҡарынындағы яралғының көбө.

**5.** *диал.* Кәпрән.

**6.** *диал.* Туйға килтерелгән бүләк, күстәнәс. *Ҡап таратыу.* **Ҡап сисеү** туй күстәнәсен асыу, асып ҡабул итеү.

◆ **Бәрән ҡабы** *диал.* бәрән тун. **Ҡап ҡорһаҡ** *ҡар.* **ҡорһаҡ. Ҡул ҡабы** мәйет йыуғанда кейә торған сепрәк бейәләй.

● *Күркәмгә күмер ҡабы ла килешә.* Мәҡәл.

**ҠАП**[2] *оҡш.* Ҡалын, йомшаҡ нәмәгә һуҡҡанда сыҡҡан тауышты белдергән һүҙ. *Ҡап итеү. Ҡап итеп ҡалыу.*

**ҠАП**[3] *киҫ.* Урталыҡ төшөнсәһен көсәйтә; тап, нәҡ. *Ҡап уртаға төшөү. Ҡап урталай ярыу. Ҡап уртаҡ бүлешеү.* ■ *Яландың ҡап уртаһынан сик һыҙығы үткән.* Ә. Вахитов. *Берегеҙ ошо ваҡытта торор ҡап ярты юлда.* Р. Ниғмәти.

**ҠАП-** *киҫ.* **Ҡа**- ижеге менән башланған төп сифат һәм рәүешкә ҡушылып артыҡлыҡ дәрәжәһен бирә. *Ҡап-ҡара. Ҡап-ҡараңғы. Ҡап-ҡаты.*

**ҠАПАЙТЫУ** *к.* Ҙур итеп тупайтыу; кәпәйтеү. *Эсте ҡапайтыу.*

**ҠАПАЙЫУ** *к.* **1.** Ҙур булып тупайып, ҡалҡып сығыу; кәпәйеү, тазрайыу. *Уға [Мигелгә] ҡорһағы ҡапайғанса ашарға ғына булһын.* Ә. Бикчәнтәев.

**2.** *кӱсм.* Маҡтаныу, эреләнеү. *Мин ҡапаймайым, үргә менмәйем, .. мин түбәндә ваҡ ҡыуаҡта фырлайым турғай кеүек.* Ғ. Ғүмәр.

**ҠАПАҠ**[1] *и.* **1.** Балаларҙы ҡурҡыта торған уйҙырма йән эйәһе; бапаҡ. / *кӱсм.* Йәмһеҙ нәмә, ҡараҫҡы. *Батыр егет йөрәге ҡоро ҡапаҡтан өркмәҫ.* «Аҡбуҙат».

**2.** (*йәки* **ҡапаҡ ауыҙ**) *диал.* Шап-шоп килеп тауыншланып ашаған, күп һөйләгән кешегә ҡарата әйтелә.

**ҠАПАҠ**[2] *с. диал.* Маҡтансыҡ, ҡупым.

**ҠАПАҠ**[3] *с. һөйл.* Килешле, йәтеш, матур. *[Аллаҡаев:] Мин дөрөҫтө әйтәмме..? Ҡапаҡ фекер әйтәмме? [Әлхәмов:] Дөрөҫ, дөрөҫ, яҡташ! Бик ҡапаҡ фекер.* С. Кулибай. // *Һыуға инеп .., һап-һары ҡаҙ бәпкәләре йөрөп ята ҡапаҡ ҡына.* Н. Нәжми.

**ҠАПАҠЛАУ** *к.* Ҡурҡытыу, янау. *[Уполномоченный] портфеленән наган һөйрәп сығарғас, ҡулаҡ Дауыттың тауышы яңғыраны: — Бына улар .. ҡапаҡлайҙар!* Б. Дим.

**ҠАПҠА** *и.* **1.** Ишек алдына, кәртә-ҡураға, баҡса һ. б. инеп-сығып йөрөү өсөн махсус эшләнгән ҙур ишек рәүешендәге ҡоролма. *Ағас ҡапҡа. Тимер ҡапҡа. Буяулы ҡапҡа. Ҡыйыҡлы ҡапҡа. Баҡса ҡапҡаһы. Йорт ҡапҡаһы. Һарай ҡапҡаһы. Ырҙын ҡапҡаһы. Ҡапҡа алды. Ҡапҡа*

*бағанаһы. Ҡапҡа башы. Ҡапҡа бәйе. Ҡапҡа келәһе. Ҡапҡа төбө. Ҡапҡанан инеү. Ҡапҡанан сығыу. Ҡапҡанан үтеү. Ҡапҡаны асыу. Ҡапҡа [-ны] бикләү. Ҡапҡа[ны] ябыу.* ■ *Бер көтөү малай барып асыр баҫыуҙың ҡапҡаһын, ырғытыр ҡунаҡ уларға күстәнәс тип, аҡсаһын.* Ш. Бабич. *Ҡарағай ҙа ҡапҡа, башы таҡта, сереп төшөр микән бер саҡта* (Халыҡ йырынан). **Арата[лы] ҡапҡа** буй-буй һайғау ғына ҡуйып яһалған ҡапҡа. *Кәртә-ҡура тиһәң, ҡайын сыбығынан үреп яһалған кәртәнән, урам яғындағы араталы ҡапҡанан башҡа нәмә юҡ.* Ғ. Дәүләтшин. **Арт ҡапҡа** ишек алдынан кәртә артына сыға торған ҡапҡа (ғәҙәттә кеше йөрөмәле генә була). *Ул [Гәрәй] хәҙер, уғыры һымаҡ, арт ҡапҡанан ҡасып-боҫоп ҡына йөрөй.* Б. Бикбай. **Бәләкәй** (*йәки* **ел**) **ҡапҡа** атһыҙ кеше өсөн айырым эшләнгән ҡапҡа. **Инлек ҡапҡа** *ҡар.* **инлек** [1]. **Ҡапҡа эсе** ишек алды, йорт алды. **Оло ҡапҡа** ат-арба менән инеп-сығып йөрөй торған урам яҡ ҡапҡаһы. **Түтә ҡапҡа** тура йөрөү өсөн ике күрше араһына эшләнгән бәләкәй ҡапҡа. **Урыҫ ҡапҡа** таҡта менән көпләп, башын ҡыйыҡлап ябып, семәрләп эшләнгән урам яҡ ҡапҡа. *Ауыл ярлы. .. Бер генә лә тимер менән япҡан өй, бер генә лә урыҫ ҡапҡа күрә алмаҫһың.* И. Насыри. **Шаҡарма ҡапҡа** таҡта урынына ҡыуал шаҡарып яһаған ҡапҡа. / Йорт һанын иҫәпләү берәмеге. *Йөҙ ҡапҡанан торған ауыл.* ■ *Далала көн иткән етмешләп ҡапҡалы ауылым, әтәстәр йырына уянған, ҡалайлы, таҡталы ауылым.* З. Шаһбазов. / *күсм.* Нимәгәләр юл асҡан символик нәмәгә ҡарата. *Белем ҡапҡаһы. Дан ҡапҡаһы.* ■ *Күпме илгә яҡты байраҡ илтеп, еңеү ҡапҡаларын астым мин.* Х. Кәрим.

**2.** Һыуҙың кимәлен билдәле бер кимәлдә тотоу өсөн асып йәки ябып ҡуя торған ҡулайлама. *Быуа ҡапҡаһы. Шлюз ҡапҡаһы.* ■ *Плотинаның һул яҡ яр ситендә 4 һыу ағыҙғыс ҡапҡа бар.* Ғ. Дәүләтов.

**3.** *спорт.* Футбол, хоккей кеүек уйындағы тупты ҡыуып индереүҙән команда тарафынан һаҡлана торған махсус билдәләнгән урын.

● *Ҡапҡаһынан эт баҡмай, түнлөгөнән ел ҡаҡмай.* Мәҡәл.

**ҠАПҠАҠ** *и.* **1.** Түмәр умартаның, солоҡтоң ҡапҡасы. *Юғарыға ҡараным, солоҡтоң ҡапҡағына етергә күп кенә бар икән әле. Үргә ынтылдым.* Н. Мусин.

**2.** *диал.* Ҡапҡас.

**ҠАП-ҠАМТЫ** *и. йыйн. диал.* Ҡарт-ҡамҡы.

**ҠАПҠАН** *и.* **1.** Ике тимер дуға һәм сирткенән торған йәнлек аулау ҡоралы. *Бүре ҡапҡаны. Төлкө ҡапҡаны. Ҡапҡан һалыу. Ҡапҡан ҡороу. Ҡапҡанға эләгеү.* ■ *Ҡапҡанға баҫҡан бүре ҡапыл ситкә һикергән, ҡарҙы йырғаҡлап аунаған, ярһып тулаған, ахыры килеп, ҡапҡанды һөйрәп ҡыуаҡлыҡҡа ингән.* С. Кулибай. **Ҡапҡан беләге** ҡапҡанды һуҡтыра торған пружина. **Ҡапҡан йәйәһе** ҡапҡандың ҡыҫып ала торған ике яҡ дуғаһы. **Ҡапҡан иләге** ҡорған ҡапҡанды ыҫҡындыра торған баҫмаҡ. **Ҡапҡан сирткеһе** иләккә эләктереп ҡапҡанды ҡора торған бик. **Ҡапҡан сынйыры** ҡапҡанды нығыта торған сынйыр. **Ҡапҡан сырмауы** иләккә сырмалған бау.

**2.** *күсм.* Кемделер алдау, эләктереү өсөн ҡоролған хәйлә. *Күп тә үтмәй ҡарт бүре Иркәбай Мораҙымды ҡапҡанға эләктереү ҡыйын түгел икәнде төшөнөп ала.* Ғ. Әмири. **Ҡапҡан ҡороу** кемгәлер ҡарата хәйлә, мәкер уйлау.

**ҠАПҠАНЛАУ** *ҡ.* Ҡапҡанға эләктереү. *Ҡапҡанлап тотоу.* ■ *Тағы бәләкәс кенә ҡар өҫтәлһә, [һунарсылар] көҙән ҡапҡанларға сығып китә.* Ғ. Дәүләтшин.

**ҠАПҠАНСЫ** *и.* Ҡапҡан менән йәнлек тотоусы.

**ҠАПҠАС** *и.* **1.** Ниҙеңдер ауыҙына ҡаплай торған япма. *Көбө ҡапҡасы. Көрәгә ҡапҡасы. Тәпән ҡапҡасы. Футляр ҡапҡасы.* ■ *[Һыу] күнәктәре туп-тулы тора, өҫтәре ҡапҡас менән ыҡсымлап ябып ҡуйылған.* Б. Бикбай.

**2.** Ишек һымаҡ итеп эшләнгән күгәнле ябыу. *Баҙ ҡапҡасы. Шкаф ҡапҡасы.* ■ *Ҡояш яңы байып барһа ла, урам яҡ тәҙрә ҡапҡастары ябыҡ булғанлыҡтан, өй эсе ҡараңғы ине.* Д. Исламов.

◆ **Баш** (*йәки* **мейе**) **ҡапҡасы** *ҡар.* **түбә ҡапҡасы. Йөрәк ҡапҡасы** *ҡар.* **йөрәк** 1. **Күкрәк ҡапҡасы** *ҡар.* **күкрәк** 1. **Күлдәк ҡапҡасы** *диал. ҡар.* **иҙеү** [1] 1. **Түбә ҡапҡасы** *анат.* баш һөйәгенең көмбәҙләнеп түбәне ҡаплап торған өҫкө өлөшө. *[Тимеркәй] йығылды. Шрапнелдең бер ауыр сүйын киҫәге уның түбә ҡапҡасын айырып алып киткән ине.* Д. Юлтый.

**ҠАПҠАСЛАУ** *ҡ.* Ҡапҡаслы итеү, ҡапҡас ябыу. *Ҡапҡаслап шкаф эшләү.*

**ҠАПҠАСЫ** *и.* Футбол, хоккей кеүек спорт уйындарында ҡапҡала һаҡта торған уйынсы.

**ҠАПҠАСЫР: ҡапҡасыр баҙары** *диал.* ураҡ бөткәндән һуң булған ҙур, бай баҙар.

**ҠАП-ҠОП, ҡап та ҡоп** *оҡш.* **1.** Ҡабат-ҡабат ҡап иткәнде белдергән һүҙ. *Ҡап та ҡоп һуғыу.* ■ *Таң алдынан һуйырҙар ҡарағасҡа ҡап-ҡоп килеп ҡуна башланы.* М. Тажи.

**2.** Ашығып, һоғаланып ашағанды белдергән һүҙ. *Ҡап та ҡоп ашау.*

**ҠАПҠЫЛАУ** *ҡ.* **1.** Һирәк-һаяҡ, әллә ниҙә бер ауыҙға алыу; ҡабыу. *Тәнзилә әбей .. ынтылып ҡурай еләктерен ҡапҡылай.* М. Тажи.

**2.** Әҙ генә ашау, ашап алыу. *[Кәюм ағай:] Әсәһе, ҡапҡылап китергә берәй нәмәң табылырмы?* М. Садыкова.

**ҠАПЛАМА** [1] *и.* Күлдәк иҙеүенең өҫтән ҡаплап тегелгән өлөшө. *Юғалған төймә урынына ҡапламаға ҙур ҡара төймә тағып ҡуйҙылар.* И. Абдуллин.

**ҠАПЛАМА** [2] *и. диал.* Түшәм.

**ҠАПЛАН** *и.* Бесәйҙәр ғаиләһенә ингән ҡара-сыбар төҫтәге имеҙеүсе йыртҡыс йәнлек.

**ҠАПЛАНДЫРЫУ** *ҡ. йөкм. ҡар.* **ҡапланыу.**

**ҠАПЛАНЫУ** *ҡ.* **1.** *төш. ҡар.* **ҡаплау** 1—4. *Тәҙрә бәҫ менән ҡапланған. Күк йөҙө ҡара болот менән ҡапланды.* ■ *Ҡаяның түбәһе бейек-бейек ҡарағайҙар менән ҡапланған.* Я. Хамматов. *Яңғырауыҡлы ҡылдар, ҡылдар, ҡылдар, тауышың менән ҡырҙар ҡаплана.* Ғ. Хәйри.

**2.** *ҡайт. ҡар.* **ҡаплау** 1. *Баштан аша ҡапланыу.*

**3.** Йөҙ менән нимәгәләр ятыу, йөҙҙө нимәгәләр ҡуйыу, йәшереү. *Мендәргә ҡапланыу.* ■ *Ҡыш үтеп яҙ айҙары килһә, керәм шул баҡсаға, сыҡмайым, шунда ятам мин, ҡапланам да сәскәгә.*

Ш. Бабич. / Кем йәки нәмәгәләр табан киҫкен хәрәкәт яһау, ташланыу. *Ят ат үҙҙәренә ҡарай боролғас, Аллаяр тәҙрәгә ҡапланды.* Ф. Иҫәнғолов.

**4.** Йөҙтүбән йығылыу, йөҙ менән ауыу. *Ҡапланып барып төшөү.* ■ *Аҫылбикә .. йөгөнә төштө, йөҙө менән ҡарға ҡапланды.* Т. Хәйбуллин.

**5.** Инә малға ятыу (иркәк малдарға ҡарата). *Айғырҙар бейәләргә ҡапланалар, уларҙы һөрөп, ҡыҫтап алып баралар.* Ш. Шәһәр.

**6.** *күсм.* Кем йәки нәмә менәндер ныҡ мауығыу, бөтә күңелен, иғтибарын йүнәлтеү. *Ҡапланып китеп эшләү.* ■ *[Сакайҙың ҡатыны:] Ағайыңды йәлләйем. .. Өйгә сак ҡайтып керһә, китабына ҡаплана.* Б. Бикбай.

**7.** Төп яғы, аҫты өҫкә әйләнеү; түңкәрелеү. *Туҫтаҡ ҡапланды. Күнәк ҡапланды, һыуы түгелде.* ■ *Бына ҡапыл .. һиҙмәй ҡалдым кәмәнең ҡапланғанын.* Ш. Бабич.

♦ **Ҡапланып киткер** ҡарғағанда әйтелә.

**ҠАПЛАТЫЛЫУ** *к. төш. ҡар.* **ҡаплатыу.** *Ҡар менән ҡаплатылған баҫыу. Эмаль менән ҡаплатылған һауыт. Сығым үҙ ваҡытында ҡаплатылды.*

**ҠАПЛАТЫУ** *к. йөкм. ҡар.* **ҡаплау.** *Ҡапҡас менән ҡаплатыу. Үлән менән ҡаплатыу. Бейәләрҙе ҡаплатыу. Тотонған аҡсаны ҡаплатыу. Тәҙрәне ҡаплатып ҡараңғылау.*

**ҠАПЛАУ** *к.* **1.** Берәй нәмәгә нимәнелер йәки берәй нәмәне нимә менәндер өҫтән ябыу. *Ҡапҡас ҡаплау. Һауыт-һабаны ашъяулыҡ менән ҡаплау.* ■ *[Шафиҡ] башын япраҡлы ботаҡтар менән ҡаплап ҡыуыш эшләне.* Я. Хамматов. *Хәтирә битенә аҡ яулығын ҡаплап .., ҡайнар ҡомға салҡан һуҙылып ятты.* Ф. Иҫәнғолов. / Йәшереү, ышыҡлау өсөн ябыу. *Ҡул менән ауыҙҙы ҡаплау. Ус менән битте ҡаплау.* ■ *[Гөлйөҙөм] шәмде ел һүндермәһен тип ҡулы менән ҡапла[ны].* Һ. Дәүләтшина. *Ергә төштө ҡуйып, тимер көрәк менән баштарҙы ҡаплап ятабыҙ.* Д. Юлтый. / Кейемде өҫкә һалыу, ябыу. *Әсмә башына шәл генә ҡаплап сығып йүгерҙе.* Б. Бикбай.

**2.** Нимәнелер өҫтән тотош ябып, күренмәҫлек итеү. *Ерҙе ҡар ҡаплаған. Яурынды ҡаплап торған оҙон сәс. Битте саң ҡапланы.* ■ *Йылғаларҙы боҙ ҡаплаған, хатта ярҙарын да белгертмәҫлек итеп көрт һалып киткән.* Ш. Янбаев. *Ел сыға ла беҙҙе ҡаплай тик туҙан, сүп, ком менән.* Ш. Бабич. / Күп булыу, күп булып сығыу, үҫеү һ. б.; баҫыу. *Битен һипкел ҡаплаған. Ташты мүк ҡаплаған.* ■ *Мең йырлы матур яҙ килә, ҡырҙарҙы ҡаплай гөлдәр.* Р. Ниғмәти. *Йортто дүрт яҡлап сейә ағастары ҡаплаған.* Ф. Әсәнов. / Күп булып киң арауыҡҡа таралыу, күп урынды биләү. *Эре-эре ҡыҙыл ҡырмыҫҡалар .. ер өҫтөн ҡаплап, мыжғып йөрөп яталар, ти.* Ж. Кейекбаев. *Тау битләүҙәрен тотош ҡаплап ятҡан мал-тыуарҙарҙың иҫәбе-хисабы булмаған.* Н. Иҙелбай. *Игенле йөктәр ҡаплаған элеваторҙар юлын.* Р. Ниғмәти.

**3.** Ышыҡлау, һаҡлау. *Йөрәгеңә атҡан дошман уғын тәнем ҡаплар минең, уҙғармаҫ.* Р. Ниғмәти. / Ышыҡлап, ябып нимәгәләр ҡамасаулау, томалау. *Күҙҙе йәш ҡапланы. Өйгә яҡты төшмәй, ағас ҡаплай.* ■ *Ҡапыл Гәрәйҙең күҙ алдарын ҡараңғыландырып, ниндәйҙер ҡыҙыл ҡорма ҡапланы.* Б. Бикбай. / Ябыу, солғап алыу (ҡараңғылыҡ, болот һ. б. ҡарата). *Ел иҫте, йәшен ялтланы, күкте болот ҡапланы.* Ф. Рәхимғолова. *Йәйҙең ҡыҫҡа һалҡынса төнө яланды ҡапланы.* Һ. Дәүләтшина. / *күсм.* Күңелде, иғтибарҙы тотош биләү. *Йөрәкте хәсрәт ҡапланы.* ■ *Шул минуттан күңелемде мөхәббәтең ҡапланы.* Ш. Бабич.

**4.** *күсм.* Етешһеҙлек, хаталарҙы һ. б. йәшереү, һиҙҙермәү. *Индрил үҙенең гәйебен .. фәлсәфәләр менән ҡапларға тырыша.* Д. Юлтый. / Тотонолған сығымды ҡайтарыу. *Алынған доход йөк ташыу расходын да ҡаплай алмай.* С. Агиш.

**5.** Инә малды аталандырыу; ҡасырыу (иркәк малдарға ҡарата).

**6.** Һауыт кеүек нәмәнең төп яғын, аҫтын өҫкә әйләндереү; түңкәреү. *Сынаяҡты ҡаплау. Ҡасаларҙы береһе өҫтөнә береһен ҡаплап ҡуйыу.* / Һауытты әйләндереп эсендәге шыйыҡлыҡты бер юлы ҡойоу; түңкәреү. *Ауыҙға ҡаплау.* ■ *[Гәрәй] бер күнәк һалҡын һыуҙы башынан аша ҡапланы.* Б. Бикбай.

♦ **Дым ҡаплау** *ҡар.* **дым. Ауыҙын ҡаплау** *ҡар.* **ауыҙ. Һуйған да ҡаплаған** бик ныҡ оҡшаған (кешегә ҡарата). *Ә улы? Атаһына шул тиклем оҡшаш .. — Һуйған да ҡаплаған.* Ғ. Әхмәтшин.

**ҠАПЛАУЫС** *и.* Ниҙелер ҡаплай торған нәмә; ҡапҡас, япма.

**ҠАПМА** *киҫ. ҡар.* **ҡап** [3]. *Ҡапма урта. Ҡапма ярты.*

**ҠАПМА-ҠАРШЫ** *с.* **1.** Бер-береһенә бөтөнләй тура килмәгән, оҡшамаған, бер-береһен кире ҡаҡҡан. *Ҡапма-ҡаршы фекер. Ҡапма-ҡаршы яуап. // Ҡапма-ҡаршыһын эшләү. // Әйткәнгә ҡапма-ҡаршы һөйләү.* ■ *Бер-береһенә ҡапма-ҡаршы булған ике синыфтың берләшергә маташыуы көлкө генә ине.* З. Шәрҡи.

**2.** *р. мәғ.* Ҡара-ҡаршы, йөҙгә-йөҙ килеп. *Ҡапма-ҡаршы ултырыу. Ҡапма-ҡаршы ҡуйыу.*

**ҠАПМА-ҠАРШЫЛЫҠ** *и.* Ҡапма-ҡаршы булған хәл, күренеш. *Капитализмға хас булған ҡапма-ҡаршылыҡтар.* ■ *[Әҫәрҙә] йөкмәтке киңлеге менән әҙәби форма араһындағы гәҙәттәге ҡапма-ҡаршылыҡ килеп тыуа.* М. Минһажетдинов.

**ҠАПРАЙЫУ** *к. һөйл.* **1.** Килешле булып ятып, һылашып тормау; ҡабарыу, ҡапайыу. *Түндың арҡаһы ҡапрайып тора. Сүмәлә тапап һалынмаған, ҡапрайып ултыра.*

**2.** *күсм.* Үҙеңде шәпкә ҡуйыу; маһайыу. *[Вакига ханым — иренә:] Һин барҙа бесәй булып йөрөгән кешеләр хәҙер ҡапрая башланы.* С. Кулибай.

**ҠАПРЫҠ** *и.* **1.** Урманда, һаҙҙа үҫкән оҙон ашһыҙ үлән. *Ҡапрыҡ сабыу. // Ҡапрыҡ үлән.*

**2.** Былтырғы оҙон ҡыу үлән. *Быйыл ҡапрыҡ көслө, үрт сығырға әҙер генә тора.* Ғ. Ишбулатов.

**3.** Ҡапрайып өйөлөп ятҡан ҡоро үлән; сыбыҡ-сабыҡ. *Юлбарыҫ үҙенең икенсе балаһын ҡапрыҡ аҫтынан килтереп сығара* (Әкиәттән).

● *Арпа еймәҫ арғымаҡ ҡапрыҡҡа моң булыр.* Мәҡәл.

**ҠАПСАЙЫУ** *к. һөйл.* Шешмәкләнеп, ҡабарып

һалыныу (күҙ ҡабағы, күҙ төбө, тамаҡ аҫтына ҡарата). *Ҡапсайған күҙ.*

**ҠАПСАҠ** *и.* Ике үркәсле дөйә (үркәс араһы яҡын, алғыһы ҙурыраҡ булғаны).

**ҠАПСАЛ** *и. диал.* Ике тау араһындағы тар ҡыҫыҡ.

**ҠАПСЫҠ** *и.* **1.** Бәләкәй тоҡ; тоҡсай. *Аҡса ҡапсығы. Юл ҡапсығы.* / *диал.* Тоҡ. *Он ҡапсығы.*

**2.** *күсм.* Кешенең ниндәйҙер бер сифатын хупламай, уға баҫым яһағанда әйтелә. *Ғәйбәт ҡапсығы. Хыял ҡапсығы. Хәйлә ҡапсығы.*

◆ **Таш ҡапсыҡ** төрмә. *[Хәмит:] Айытбай бөгөн булмаһа, иртәгә таш ҡапсыҡҡа китә торған кеше.* С. Агиш. **Тот ҡапсығыңды** *йәки* **ҡапсығыңды киң тот** буш өмөттән көлөп әйтелә. *[Әхмәҙуллин:] Әллә һин гел маҡтарҙар тип көткәйнеңме? Әҙерләп ҡуйғандар, ти, тот ҡапсығыңды.* Д. Исламов.

● *Беҙ ҡапсыҡта ятмай.* Мәҡәл.

**ҠАПСЫҠЛАНЫУ** *ҡ.* **1.** Ҡапсыҡ һымаҡ формаһыҙ, киң булыу (кейемгә ҡарата). *[Нурияның зифа буйын] өҫтөндә ҡапсыҡланыбыраҡ торған комбинезон да боҙа алмай.* Ә. Таһирова.

**2.** Шешмәкләнеп, ҡабарып тороу (күҙ төбөнә ҡарата).

**ҠАПТАЛ** *и.* **1.** Эйәр-ыңғырсаҡтың ат арҡаһына ята торған ике ҡанаты. *Ҡаптал кейеҙе.* ■ *Ғәжәп эйәр ине был: ҡапталдары, күмелдерек, ҡойошҡаны тарамыш менән беркетелгән, айылдарына көмөш баҫылған.* З. Ураҡсин.

**2.** Ат арҡаһының эйәр-ыңғырсаҡ ята торған урыны.

**ҠАПТЫР** *оҡш.* Ҡатыраҡ йоҡа нәмәне йомарлағанда сыҡҡан тауышты белдергән һүҙ. *Ҡаптыр итеү.*

◆ **Ҡаптыр тун** буялмаған тышһыҙ тун. *Төйөнсөгөм йөкмәп, ҡаптыр тундан килеп индем, малай, ҡалаға.* Ғ. Амантай.

**ҠАПТЫРҒА** [1] *и.* **1.** Аҫып йөрөмәле күн моҡсай.

**2.** *диал.* Ҡалъян.

**ҠАПТЫРҒА** [2] *и.* **1.** Семәр баҫылған бил ҡайышы. *Ҡаптырғаһына ҡылысын таҡҡан.* Ғ. Ибраһимов.

**2.** *диал. кар.* **ҡаптырма** 1.

**ҠАПТЫРҒЫС** *и.* Эләктереү, ҡаптырыу өсөн хеҙмәт иткән ҡулайлама.

**ҠАПТЫР-ҠОПТОР, ҡаптыр ҙа ҡоптор** *оҡш.* **1.** Ауыр аяҡ кейемен һөйрәп атлағанда, ҡоро үләнде шауҙырлатып йырып барғанда һ. б. сыҡҡан тауышты белдергән һүҙ.

**2.** *с. мәғ. һөйл.* Ҡаптырлап торған, ҡаптыр. *Ҡаптыр-ҡоптор тиреләр. Ҡаптыр-ҡоптор итеү. Ҡаптыр-ҡоптор килеү.* ■ *Үлән араһынан бер инә һуйыр, уның артынан, ҡаптыр-ҡоптор итеп, балалары осоп китте.* Н. Мусин.

**ҠАПТЫРЛАҠ** *с.* Ҡаптырлап торған, ҡаптырлап тора торған. *Ҡаптырлаҡ ҡағыҙ. Ҡаптырлаҡ тире.* ■ *Ҡаптырлаҡ тун йәки сәкмән, шығырлап торған сабата .. кейгән кешеләр өйгә шығырым тулды.* А. Карнай.

**ҠАПТЫРЛАТЫУ** *ҡ.* Ҡаптыр-ҡоптор иттереү. *Ҡаптыр-ҡоптор туныңды ҡаптырлатып кейерһең* (Халыҡ йырынан).

**ҠАПТЫРЛАУ** *ҡ.* Ҡаптыр-ҡоптор килеү, ҡаптыр-ҡоптор итеү.

**ҠАПТЫРМА** *и.* **1.** Ике яғын яҫы итеп, көмөш менән биҙәкләп, семәрләп эшләгән элгес (камзул, кәзәки кеүек кейемдә һәм ҡәмәрҙә була). *Көмөш ҡаптырма.* ■ *Таглыбай .. биленә төрлө төҫтәге ептән суптарлап һуғылған яҫы кәмәрен тартып, ҡаптырмаһын эләктереп ҡуйҙы.* Ш. Шәһәр.

**2.** Ирҙәр ҡулдағенең ең осона ҡуйыла торған баулы ҡуш төймә.

**3.** *диал. кар.* **элгес** 1.

**4.** *диал. кар.* **таралғы** [1].

**ҠАПТЫРМАЛАУ** *ҡ.* Ҡаптырмалы итеү, ҡаптырма ҡуйыу. *Ҡаптырмалап тегеү.*

**ҠАПТЫРМАЛЫ** *с.* **1.** Ҡаптырмаһы (1,4 мәғ.) булған. *Ҡаптырмалы кәзәки.* ■ *Ҡаптырмалы ҡайыш менән ҡыҫып быуҙым билемде* (Халыҡ йырынан).

**2.** Ҡаптырыу өсөн төймә, һиҙәп ҡуйып тегелгән. *Ҡаптырмалы ең. Ҡаптырмалы яға.* ■ *[Әклимә Сабитовна] өҫтөнә алдан ҡаптырмалы аҡ халат кейгән.* Н. Иҙелбай.

**ҠАПТЫРЫЛЫУ** *ҡ. төш. кар.* **ҡаптырыу** [2] 1.

**ҠАПТЫРЫУ** [1] *ҡ.* Берәй нәмәне кемдеңдер ауыҙына ҡабырға биреү. *Дарыу ҡаптырыу. Тәмәке ҡаптырыу.* ■ *Кейеҙбай .. алмаһын ҡырҡып ҡыҙға ҡаптырҙы* (Әкиәттән). / *күсм.* Кешене яуапһыҙ ҡалдырырлыҡ итеп әсе һүҙ әйтеү, һоғондороу. *Хәмиҙә әсе генә итеп ҡаптырмаҡсы ине лә, әсәһе менән ҡарсыҡтан оялды.* С. Агиш.

**ҠАПТЫРЫУ** [2] *ҡ.* **1.** Төймә, ҡаптырма, элгес кеүек нәмәне эләктереү. *Иҙелбай ағай урынынан торҙо ла, ҡуйтырының йомро төймәләрен ҡаптыра башланы.* Х. Мохтар.

**2.** Ҡармаҡҡа эләктереү. *Балыҡ ҡаптырыу.* /Ау ҡоралына эләктереү. *Ҡапҡанға ҡаптырыу. Тоҙаҡҡа ҡаптырыу.* / *күсм.* Маҡтып тотоп, эләктереү. *Хәйерелбанат апайҙың тимер кеүек ҡаты бармаҡтары беләктән ҡаптырып алды.* З. Ғәлимов.

**3.** *күсм.* Ҡулға төшөрөү; эләктереү, тотоу. *[Ҡатын:] Спектакль ҡарарға йөрөй тиһеңме ни уны? Ҡыҙҙар ҡаптырырға йөрөй ул бында.* А. Ғирфанов. *[Асияның] уғрылыҡ буйынса иптәше булған. Уны ҡайҙалыр Себерҙә ҡаптырғандар.* Н. Иҙелбай.

**4.** Ҡоралдың үткерлегән һынау өсөн ҡулды тейҙереү. *[Ғатау ағай] бысаҡты оҙаҡ итеп, бармаҡ битенә ҡаптырып ҡарай-ҡарай үткерләне.* Р. Ғабдрахманов.

◆ **Ҡармаҡҡа ҡаптырыу** кешене берәй хәйлә менән үҙ ҡулыңа төшөрөү.

**ҠАПТЫРЫУ** [3] *ҡ.* Тоҡанып яныуға килтереү, янып китеүгә сәбәпсе булыу. *Ут ҡаптырыу.*

**ҠАПШАНЫУ** *ҡ.* **1.** *ҡайт. кар.* **ҡапшау** 1. *Ҡапшанып эҙләү.*

**2.** Оҙаҡ итеп берәмтекләп ҡапшау. *[Хәкимдең] нескә бармаҡтары, тиҫбе тартҡан ҡарттарҙыҡы шикелле, скрипка ҡылдары өҫтөндә ҡапшана ине.* З. Әхмәтов.

**ҠАПШАУ** *ҡ.* **1.** Ҡул менән тотҡолау, һыйпау; һәрмәү. *Кеҫәне ҡапшау. Ҡапшап ҡарау. Ҡапшап тикшереү.* ■ *Мәрйәм бюст янына килә. Уға оҙаҡ ҡарап тора, ҡулдары менән ҡапшап ҡарай.* Ә. Мирзаһитов. *Эшләпәһен эҙләй Сафый, йоҡлаған ерен ҡапшап.* М. Сөндөклө. / *күсм.* Ситләтеп

белергә тырышыу; тикшереү. *Беҙ, гәҙәттәгесә, разведка төркөмдәре ебәреп, дошмандың көсөн ҡапшап ҡараныҡ.* «Ағиҙел», 1964, № 2.

**2.** Ҡараш менән эҙләү, ентекләп күҙәтеү. *Әфләтунов .. оҙон өҫтәлде, өр-яңы трибунаны ҡапшай-ҡапшай ҡарап сыҡты.* Ә. Вәли. *Ул күрә, күрә башланы, караштары күкте ҡапшаны.* М. Басыров.

**ҠАПЫ** *и. иҫк.* Ҡапҡа.

♦ **Күк ҡапыһы асылыу** *шул уҡ* **күк ҡабағы асылыу** (*ҡар.* **күк** [3]).

**ҠАПЫЛ** *р.* **1.** Етеҙ, киҫкен хәрәкәт менән; кинәт. *Ҡапыл тороп ултырыу.* ■ *Ямал ҡапыл боролоп, асыҡ торған тәҙрә янына килде.* М. Тажи. *Ҡапыл тартып алдым ҡулымды, утҡа бешкән көйөк һиҫкәнеп.* К. Кинйәбулатова.

**2.** Көтмәгәндә, уйламағанда, иҫкәрмәҫтән. *Ә бер саҡты, ҡапыл таң алдынан, елме, кемдер тәҙрә шаҡыған.* Ғ. Сәләм. *[Сөмбөл:] Әхмәт, ҡапыл арттан килеп, башымды толоп менән ҡапланы ла санаға төртөп ауҙарҙы.* Ф. Әсәнов.

**3.** Бик ҡыҫҡа ғына ваҡыт эсендә, бик тиҙ, кинәт. *Эш ҡапыл ғына бөттө лә ҡуйҙы.* ■ *Минең аптырауым ҡапыл юғалды.* Д. Юлтый.

**4.** *с. мәғ.* Тиҙ генә ҡабынып, ҡыҙып китеүсән. *Ҡапыл кеше.*

**ҠАПЫЛҒАРА** *р. ҡар.* **ҡапыл-ҡара.**

**ҠАПЫЛДА** *р.* **1.** Шул уҡ мәлдә, тиҙ генә. *Ҡапылда ышанмай тороу.* ■ *Хөрмәттең теленә ҡапылда йән иретерлек һүҙ килмәне.* Я. Вәлиев.

**2.** Көтмәгәндә, уйламағанда; ҡапыл. *Быйыл йәй килә холоҡһоҙ, һыуынды ла ҡуйҙы ҡапылда.* К. Кинйәбулатова.

**3.** *һөйл.* Ошо мәлдә, хәҙергә, әлегә. *Ярай, таңға, бәлки, буран баҫылыр, ҡапылда бында ҡалайыҡ.* С. Кулибай. — *Һауму, Ғарифулла бабай!..— Арыу әле ҡапылда. Ултырып кит.* Ә. Вахитов.

**ҠАПЫЛДАН** *р.* Уйламағанда, көтмәгәндә, иҫкәрмәҫтән; ҡапыл. *Ҡапылдан йырлап ебәреү.* ■ *Бер саҡ ҡапылдан ут һүнеп ҡала.* Т. Арслан.

**ҠАПЫЛ-ҠАРА** *р.* Шул мәлдә үк, ҡапыл ғына. *Тыңлаусылар ҡапыл-ҡара ни әйтергә белмәй һүҙһеҙ тынып ҡалды.* З. Биишева. *Батша [егеттең һүҙенә] ҡапыл-ҡара ышанып етмәй* (Әкиәттән).

**ҠАПЫЛТ** *р. диал.* Ҡапыл.

**ҠАПЫЛТАҒА** *р. диал. ҡар.* **ҡапылда** 3.

**ҠАПЫЛТЫН** *р. диал. ҡар.* **ҡапыл** 3.

**ҠАПЫС** *с.* **1.** Шешмәкләнеп, ҡапсыҡланып торған. *Ҡапыс күҙ. Ҡапыс ҡабаҡ.* ■ *Ҡапыс күҙле, һары бужмаҡ йөҙлө Нәгим бисәһе Вәлимә лә килеп етте.* Һ. Дәүләтшина.

**2.** *диал.* Кепес.

**ҠАПЫСЛАНЫУ** *к.* Ҡапысҡа әйләнеү, ҡапыс булыу. *Күҙе ҡапысланған.*

**ҠАР** *и.* Болоттан ап-аҡ булып, төрлө кристаллик формала ойошоп яуа торған яуым-төшөмдөң бер төрө. *Боҙлауыҡ ҡар. Епшек ҡар. Ҡар бөртөгө. Ҡар бураны. Ҡар төшөү. Ҡар һырыу. Ҡар болото.* ■ *Октябрь байрамы алды көн ине. Иртә таңдырып ҡырпаҡ ҡар төштө.* Ф. Иҫәнғолов. *Көнө көнмө .., ҡар ҡатыш ямғыр яуа.* Ә. Мирзаһитов. **Йәш ҡар** яңы яуған ҡар. *Йәш ҡарҙан һуң һалҡынайтып ебәрҙе.* Я. Вәлиев. **Күбәләк (йәки ябалаҡ) ҡар** эре күҙле йомшаҡ ҡар. *Беҙҙең яҡта ғына күбәләк ҡар шундай матур булып яуа бит.* Ғ. Рамазанов. / Ергә яткан шул кристалдар. *Йоҡа ҡар. Ҡалын ҡар. Йомшаҡ ҡар. Өрпәк ҡар. Ярмалы ҡар. Ҡар кисеү. Ҡар көрәү. Ҡарға батыу. Ҡарға буялыу. Ҡарға сумыу. Ҡар һыуы.* ■ *Яҙғы туңғалаҡ ҡарҙа [Байморат] ағаһы менән икәүләп урманды ҡырҡып ташланылар.* К. Мәргән. *Урамдағы юлдарҙы ҡар баҫып киткән.* Ф. Әсәнов. **Ала ҡар** ҡар ирей, урыны-урыны менән ер асыла башлаған яҙғы мәл. **Аҙау ҡар** оҙаҡ яткан ҡар. **Ҡар күҙе тишелеү** тамсы тамып, ҡар ирей башлау. **Ҡар тотҡос** ҡар тотоу өсөн ҡуйыла торған кәртә. **Ҡар тотоу** ышыҡ ҡуйып, баҫыуға ҡар туплау. **Ҡар һөрҙөргөс** ҡар тотолһон өсөн, ҡалын ҡарҙы ҡырғыслай торған машина.

♦ **Ҡабаҡҡа [ҡарыш] ҡар яуҙырыу** *ҡар.* **ҡабаҡ** [1]. **Ҡыҙыл ҡар яуғас** бер ваҡытта ла буласаҡ түгел нәмәгә ҡарата әйтелә.

● *Ала ҡарҙа аласағың булһын.* Мәҡәл.

**ҠАРА** [1] **1.** *с.* Ҡором, күмер төҫөндәге; *киреһе* аҡ. *Ҡара төҫ. Ҡара сәс. Ҡара ҡаш. Ҡара костюм. Ҡара таҫма. Ҡара тупраҡ.* ■ *Һылыубикә, һылыу туташ, ҡыҙ солтаны, бит уртаңда ҡара миң бар — бит сулпаны.* Ш. Бабич. *Ҡара ҡытат елән ай иңемдә, ҡара ебәк билбау билемдә* (Халыҡ йырынан). **Шоморт ҡара** бик ныҡ ҡара, ҡап-ҡара. *Шоморт ҡара күҙ.* / Төрлө төҫтөң үҙенә бер төрлө ҡоңғорт төҫмөрөн белдерә. *Ҡара йәшел. Ҡара күк. Ҡара ҡыҙыл.* / Ғәҙәттәге йәки төп төҫкә ҡарағанда ҡуйыраҡ төҫтә булған. *Ҡара төтөн. Ҡара туҙан. Ҡара ҡан.* ■ *Әле генә тып-тын торған һауа ҡапыл боҙолоп, ҡара болот сыҡты.* М. Тажи. / Көн яҡтыһы булмаған йәки көн яҡтыһы төшмәгән; ҡараңғы. *Ҡара кис. Ҡара таң. Ҡара урман.* // *Кис ҡараһы.* ■ *Күккә ракеталар күтәрелә ярып төндөң ҡуйы ҡараһын.* Х. Кәрим. / Тәне аҡ булмаған йәки ҡояшта янып аҡлығын юғалтҡан. *Ҡара тәнле халыҡ. Ҡара кеше.* // *Минең тән ҡояшҡа бешкән бит?.. [Зәйнәп:] Күрәм, артыҡ ҡара янғанһың, Ким.* Ғ. Сәләм.

**2.** Ҡар булмаған, ер асыҡ яткан; ҡарһыҙ. *Ҡара көҙ. Ҡара туң. Ҡара һыуыҡ.* ■ *Тирә-яҡтағы ауылдарҙың ярлы-ябағалары .. ҡара көҙгә кергәнсә урағын урып, игенен һуғып, тау-тау итеп мәгәзәйгә ташып ҡалғандар.* М. Тажи. / *и. мәғ.* Ҡарҙан асылған ер. *Ҡараға баҫыу. Ҡараға сығыу. Яҙ етте, мал аяғы ҡараға тейҙе.* / *и. мәғ.* Ерҙең ҡарҙан асылған мәле; яҙ башы. *[Әхмәт ағай:] Быйыл да ашлыҡты яңыға түгел, яҙғы ҡараға тиклем дә һуҙып булманы. Үтескә биреүсе лә юҡ.* Ғ. Әмири. **Ҡараға аяҡ баҫыу** ҡыш сығыу, яҙҙы еткереү. *Күп кенә колхоздарҙа бесән бөттө. Малды нисек ҡараға баҫтырырбыҙ инде.* Я. Хамматов.

**3.** Керле, бысраҡ. *Бите ҡара. Йыуылмаған ҡара кер. Бысраҡ ҡара ҡул.* // *Ҡараға ҡатыу.*

**4.** Айырым оҫталыҡ, квалификация талап итмәгән, күберәк ҡул көсөнә, физик эшкә бәйле булған. *Ҡара эш. Ҡара көс.*

**5.** Революцияға тиклемге Рәсәйҙә: түбәнге ҡатламға ҡараған, ябай халыҡҡа мөнәсәбәтле; белемһеҙ, наҙан. *Ҡара мужик. Ҡара эшсе.* ■ *[Баяр:] Һеҙҙең көйөк гимназистҡаға ҡара ха-*

*лыҡ араһында бил бөкрәйтеп, бесән сабып йөрөү оҡшамай.* М. Тажи. *Сура, сура, сурамын, түрә түгел, ҡарамын* (Халыҡ йырынан). / Культураһыҙ, артта ҡалған, наҙан. *Мейәҙ ауылы культура үҙәгенән ситтә булып, .. гәҙәттән тыш ҡара ине .. һораша башлағас, бөтә ауылға ике генә бөртөк уҡый-яҙа белгән кеше барлығы мәғлүм булды.* И. Насыри. / Ҡағыҙға яҙып дөрөҫ итеп эшләнмәгән, ҡағыҙ битенә төшмәгән. *Октябрь революцияһынан һуң .. башланған ҡара булешеүҙең беренсе һөҙөмтәһендә ерҙе эшләмәй биләүҙәр бөтөрөлдө.* «Совет Башҡортостанының ун йылы», 1929.

**6.** *күсм.* Йәм-тәм бирерлек сифаты булмаған. *Ҡара бутҡа.* ■ *Ҡайҙа ал таң, ҡояш, яҡты ай? Елдәр бейей ҡара яланда.* Ғ. Хәйри.

**7.** *күсм.* Ҡыуанысһыҙ, ҡайғылы, ғазаплы, ауыр. *Ҡара бәхет. Ҡара тәҡдир. Ҡара яҙмыш. Ҡара көндәр килде.*

**8.** *күсм.* Күңел бысраҡлығынан килгән; яуыз, мәкерле. *Ҡара ниәт. Ҡара уй.* ■ *Тулҡынлана ҡара көскә ҡаршы дәһшәт менән эшсе донъяһы.* Д. Юлтый.

**9.** *күсм.* Үҙе эйәреп килгән исемдәрҙең мәғәнәһенә ҙур кимәл, көслө дәрәжә төҫмөрө бирә. *Ҡара аслыҡ. Ҡара аҡһаҡ. Ҡара бай. Ҡара йәйәү. Ҡара ҡайғы. Ҡара тир. Ҡара ямғыр. Ҡара яу.* / Ҡайһы бер ауырыу исемдәре менән килеп, уның көсәйгәнен белдерә. *Ҡара ҡылау. Ҡара һырҡау.* ■ *[Ғәләмшә әбейҙең] ире һары менән өс йыл ауырыны. Шунан ҡара һарыға әйләнеп, ярты йыл йөрөнө лә үлеп китте.* С. Агиш.

**10.** Ҡайһы бер зоологик һәм ботаник атамалар составында килә. *Ҡара айыу. Ҡара ерек. Ҡара ҡайын. Ҡара төлкө.*

**11.** *и. мәғ. күпл.* **каралар** Шахмат һәм шашка уйынында аҡтарға ҡаршы яҡ фигуралар.

♦ **Йөҙ ҡараһы** хурлыҡ. *Ҡыҙҙы кейәүгә ташлап китеү нисек хурлыҡ булһа, ҡыҙ һоратып барған ерҙән буш ҡайтыу ҙа шулай уҡ оят, шундай уҡ йөҙ ҡараһы тип иҫәпләнә.* К. Мәргән. **Йөҙгә ҡара яғыу** *ҡар.* **йөҙ** [1]. **Йөҙө(н) ҡара** *ҡар.* **йөҙ** [1]. **Йөҙ(ө) ҡара ҡойолоу** *ҡар.* **йөҙ** [1]. **Йөҙөн ҡара итеү** *ҡар.* **йөҙ** [1]. **Күҙ ҡарам** иркәләгәндә әйтелә; ҡәҙерлем, ғәзизем. *[Гәүһәр:] Ай, балам, бәгерем, бауырым, .. белмәйһең шул әсәң йәш ҡойғанын һине һағынып, минең күҙ ҡарам.* С. Мифтахов. **Күҙ ҡараһы** *ҡар.* **кешелек** [2]. **Күҙ ҡараһындай** (*йәки* **ҡараһы кеүек**) иң яҡын, ҡәҙерле. *Күҙ ҡараһы кеүек яңғыҙ атты — туры атты бигерәк яраттым.* Б. Ишемғол. **Ҡара болот һымаҡ** ябырылып, дәһшәт һалып килгән нәмәгә ҡарата әйтелә. *Төрлө яҡтан ҡара болот һымаҡ баҫып килгән был хәшәрәт көстәр менән көрәшкә бөтә илдең эшсе, ярлылары саҡырылды.* Һ. Дәүләтшина. **Ҡара буран** *ҡар.* **буран** 2. **Ҡара бура** *ҡар.* **бура** [1] 1. *Күлдәк-фәлән алырға булһа, өйҙә ҡара буран сыға.* Ғ. Ғүмәр. **Ҡара бутҡа** *ҡар.* **бутҡа** 1. **Ҡара груһ** *ҡар.* **груһ. Ҡара иҫәп** *ҡар.* **иҫәп** 1. **Ҡара йөрәкле** *ҡар.* **йөрәк. Ҡара йәштән** *ҡар.* **йәш** [2]. **Ҡара ҡағыҙ** *ҡар.* **ҡағыҙ. Ҡаранан аҡты айырыу** *йәки* **аҡты ҡаранан айырыу** *ҡар.* **айырыу. Ҡараны аҡ итеп күрһәтеү** *йәки* **аҡты ҡара итеп күрһәтеү** үҙ файҙаңдан сығып, ялғанды дөрөҫ йәки дөрөҫтө ялған итеп аңлатыу. *[Сәғиҙә:] Аҡты ҡара итеп күрһәтеү менән ни файҙа сығармаҡ булаһығыҙҙыр, мин аңламайым.* М. Тажи. **Ҡара таныу** уҡый-яҙа белеү. *Ҡолмәт ҡара таныр, уҡып-яҙмаһа ла, активлығы булды һәр эштә.* Т. Йәнәби. **Тырнаҡ ҡараһындай** бик әҙ, бик бәләкәй. *Тырнаҡ ҡараһындай ҙа ғәйебем юҡ.* **Яман ҡара** *һөйл.* аяҡ-ҡулдағы һыҙлаулы ҡаты ауырыу.

● *Аҙашмам тигән егетте ҡара томан аҙаштыра.* Мәҡәл. *Аҡ матур — саҡ матур, ҡара матур — бик матур.* Әйтем. *Ҡара ташты йыуһаң да ағармай.* Әйтем. *Ҡара кешенең тире сыҡҡансы, аҡ кешенең йәне сығыр.* Әйтем. *Үҙемдеке тигәндә үгеҙҙәй ҡара көсөм бар.* Әйтем.

**ҠАРА** [2] *и.* Яҙыу өсөн ҡулланылған, ниндәйҙер буяу иҙелгән шыйыҡлыҡ. *Зәңгәр ҡара. Ҡара ҡара. Ҡыҙыл ҡара. Ҡара һурҙырыу. Ҡараға буялыу.* ■ *Ҡара һауыттары көмөштөр, ҡәләмдәре уның ҡамыштыр* (Халыҡ йырынан).

**ҠАРА** [3] *и.* Киндер йә башҡа нәмә һуҡҡанда буйлыҡ оҙонлоғон иҫәпләү берәмеге (дүрт ҡәләп буйына, йәғни сама менән алты метрға тиң).

**ҠАРА** [4] *и. һөйл.* Эре мал, йылҡы-һыйыр малы. *Ҡараһыҙ ҡалыу.* ■ *Йортоңдо, ҡараңды ташлап, ситкә китәһеңме?*

**ҠАРАБАЛЫҠ** *и.* Сазандар ғаиләһенә ҡараған, һырт буйы йәшкелт төҫтәге, ҡанаты түңәрәк йылға, күл балығы.

**ҠАРАБАУЫР** *и. диал.* Ирлән.

**ҠАРАБАШ** [1]: **карабаш турғай** турғайҙар ғаиләһенә ҡараған ҡара түбәле, һары түшле һайраусы турғай. *[Исмәғил:] Бынан ҡарабаш үткән. Ул дегәнәктән оҙонморон ҡарышлауыҡтарын суплап ашай ҙа орлоғон ҡалдыра.* Я. Вәлиев. **Бәләкәй ҡарабаш турғай** ҡара түбәле, буҙ түшле ваҡ урман ҡошо.

**ҠАРАБАШ** [2] *и.* Роза сәскәлеләр ғаиләһенә ҡараған күп йыллыҡ дарыу үләне. *Дарыу ҡарабашы.* ■ *Урмандарҙа кәрешкә, ҡарабаш һәм көпшә сәскә ата.* Ә. Вәли.

**ҠАРАБОЙҘАЙ** *и.* **1.** Аҡ баллы сәскәле, өс ҡырланып торған көрән орлоҡло иген үҫемлеге. *Сәскәле шәл ябынған ҡарабойҙай, һарғылт сәскә атҡан йүкәләр, һиҙәһеңме, корттар балығыҙҙы умартаға урлап осалар.* Ғ. Хәйри.

**2.** Шул үҫемлектең аҙыҡҡа ҡулланылған орлоғо. *Ҡарабойҙай бутҡаһы. Ҡарабойҙай ярмаһы.* ■ *Ҡарабойҙай, ҡарабойҙай! Һалдат ҡаҙанының батшаһы .., кем генә яратмай һинең туҡлыҡлы, тәмле бутҡаңды!* Д. Исламов.

**ҠАРАБӘЖЕЙ** *и. диал.* Тарма.

**ҠАРАҒАЙ** *и.* Оҙон ҡаты ылыҫлы, тубырсыҡлы, мәңге йәшел эре ағас. *Ҡарағай ағасы. Ҡарағай сайыры. Ҡарағай урманы. // Ҡарағай бүрәнә. Ҡарағай өй. Ҡарағай таҡта.* ■ *Һыуыҡ ҡышҡа ҡарамай, йәшел тора ҡарағай.* Ә. Вәли. *Ҡарағай ҙа ағас бейек ағас, менеп булмай кирәм булмағас* (Халыҡ йырынан).

**ҠАРАҒАЙ-ҠЫПСАҠ** *и.* Ҡыпсаҡ ҡәбиләһенең бер ырыуының исеме.

**ҠАРАҒАЙЛЫ** *с.* Ҡарағай ағастарынан торған. *Ҡарағайлы ҡара урман кемгә ышыҡ булмаған* (Халыҡ йырынан).

**ҠАРАҒАЙЛЫҠ** *и.* Ҡарағай ағастары күп үҫкән ер; ҡарағай урманы.

**ҠАРАҒАЛПАҠ** *и.* Ҡарағалпаҡста төпның

халҡын тәшкил иткән милләт һәм шул милләттең бер кешеһе (төрки телдәренең береһендә һөйләшә). *Ҡарағалпаҡ халҡы. Ҡарағалпаҡ ҡатыны. Ҡарағалпаҡ теле.*

**ҠАРАҒАЛПАҠСА** *р.* **1.** Ҡарағалпаҡ телендә. *Ҡарағалпаҡса һөйләшеү.*

**2.** Ҡарағалпаҡ халҡына хас рәүештә. *Ҡарағалпаҡса бейеү.*

**ҠАРАҒАН** *и. диал.* **1.** Эт муйылы (*ҡар.* **муйыл**).

**2.** Селек.

**ҠАРАҒАНАТ** [1] *и.* Турғай һымаҡтар отрядына ҡараған сыйырсыҡ ҙурлыҡ, ҡанат-ҡойроғо ҡара, башы менән арҡаһы буҙ урман ҡошо (килбәте, ҡылығы һайыҫҡанға оҡшаңҡырап тора).

**ҠАРАҒАНАТ** [2] *и.* Сазандар ғаиләһенә ҡараған, ҡорман балығына оҡшаған йылға балығы. *Ебеткән борсаҡҡа, бешергән һолоға, бойҙайға опто, ҡарағанат һәйбәт ҡаба.* Ә. Чаныш.

**ҠАРАҒАНДА** *бәйл.* Төбәү килешендәге һүҙҙәрҙән һуң килеп, әйтелгән фекерҙең сығанағын күрһәткәндә ҡулланыла. *[Ертыңлар:] Йүгерек батыр бер көнлөк юлда йоҡлап ята, тын алышына ҡарағанда, башына әллә нимә кейҙерелгән булырға тейеш* (Әкиәттән). / Кем йәки нәмә менәндер сағыштырып күрһәткәндә ҡулланыла. *Айбулаттың ҡулъяҙыуы Сәфәрҙекенә ҡарағанда асыҡ та, матур ҙа ине.* Һ. Дәүләтшина.

**ҠАРАҒАС** *и.* Көҙөн ҡойола торған йомшаҡ ылыҫлы, затлы һаналған ҡаты ағас. *Ҡарағас сайыры. Ҡарағас тубырсығы. Себер ҡарағасы. //Ҡарағас таҡта.*

**ҠАРАҒАСЛЫҠ** *и.* Ҡарағас күп үҫкән урын. *[Таңдыса] өйкөм-өйкөм үҫкән ҡайынлыҡтарҙы, һирәк-һаяҡ ҡарағаслыҡ, ваҡ бешәлектәрҙе үтеп .. бер үҙәктең башына килеп сыға* (Әкиәттән).

**ҠАРАҒАТ** *и.,* **ҡара ҡарағат 1.** Һыу буйҙарында һәм баҡсала үҫә торған ваҡ ҡына әскелтем ҡара емешле ҡыуаҡ.

**2.** Шул ҡыуаҡтың емеше. *Ҡарағат ҡағы. Ҡарағат вареньеһы. Ҡарағат тиреү.* ■ *Ағас араһына инеп ҡарағат, муйыл йыйыуҙар бигерәк күңелле ине.* М. Ғафури. **Ҡыҙыл ҡарағат** ваҡ ҡына әскелтем ҡыҙыл емешле ҡыуаҡ һәм уның емеше.

◆ **Тал ҡарағаты** талға сырмалып үҫкән ваҡ орлоҡло үлән. **Эт ҡарағаты** 1) баҡса ерендә үҫкән аҡ сәскәле, ваҡ ҡара емешле үҫемлек; 2) *диал.* эт муйылы (*ҡар.* **муйыл**). **Эт ҡарағаты һымаҡтар** *бот.* картуф, помидор, тәмәке, тилебәрән һ. б. ингән үҫемлектәр ғаиләһе.

**ҠАРАҒАТЛЫҠ** *и.* Ҡарағат күп үҫкән урын. *Әсәйем .. Сакабай биләненең һалҡын һыулы инеше янындағы ҡарағатлыҡҡа алып бара ине.* С. Кулибай.

**ҠАРАҒАШ** *и.* Дүрт мөйөшлө ваҡ йәймәнең уртаһына тартҡан муйыл, ем һалып, ике мөйөшөн йәбештереп бешергән пирог төрө.

**ҠАРАҒАШҠА** *и. диал.* Ҡашҡалаҡ өйрәк (*ҡар.* **өйрәк** 1).

**ҠАРАҒОЙРОҠ** *и. һөйл.* Ажау балаһы, бәләкәй ажау балығы.

**ҠАРАҒОРТ** *и.* Ағыулы эре ҡара үрмәксе (Урта Азияла һәм Ҡырым сүллегендә йәшәй).

**ҠАРАҒОШ** [1] *и.* Ҡарсығалар ғаиләһенә ҡараған, бөркөттән бәләкәйерәк ҡара йыртҡыс ҡош (ағас башына ояләй). *Күлдә йөҙгән ҡаҙҙы тиберге һауаларҙан оса ҡарағош* (Сеңләүҙән).

◆ **Ҡарағошло мисәт** *һөйл.* Батша Россияһының дәүләт гербы төшөрөлгән рәсми мисәт. *Бер нисә көндән ҡалаға етеп, мең бәлә менән әлеге шәжәрәгә ҡарағошло мисәт һуҡтырып, ҡайтыуға сыға булар.* Ә. Вахитов.

**ҠАРАҒОШ** [2] *и.* Салғыны һапҡа ныҡытыу өсөн арҡыры ҡуйылған тимер. *[Ғариф ағай] ике иҫке ҡарағош табып колхоз салғыларын ялғаны.* Б. Викбай.

**ҠАРАҒОШЛАУ** *к.* Салғыға ҡарағош ҡуйыу. *Салғыны ҡарағошлау.*

**ҠАРАҒУРА** *и.* **1.** *йыйн.* Эре-торо, ҡаты сүл үләне. *Ҡарағура сабыу. Ҡарағура бесәне.* ■ *Һуғыштан һуңғы ауыр йылдар. Яландарҙы ақтамыр алған, ҡарағура баҫҡан.* Ғ. Вәлиев. *Аҫыл йылҡы малын кәҙерләй белмәйҙәр. Тәрбиә юҡ йүнләп .., ҡышҡы сатнама һыуыҡтарҙа ҡарағура ашаталар.* Ж. Кейекбаев.

**2.** *диал.* Ҡалдау ер. *Сиҙәм, ҡарағура яландарын иген баҫыуҙары итәйек.* Ҡ. Даян.

**ҠАРАҒУСҠЫЛ** *с.* Ҡараға тартым төҫтәге, ҡараһыу. *Баш өҫтөндә йондоҙҙар йымылдай. Ҡарағусҡыл күкте электр билбауы һымаҡ, ҡаҙ юлы уратып алған.* Ә. Ихсан. / Төрлө төҫтөң ҡараға тартым төҫмөрөн бирә. *Ҡарағусҡыл йәшел. Ҡарағусҡыл ҡыҙыл.*

**ҠАРАҒУСҠЫЛЛАНЫУ** *к.* Ҡарағусҡыл төҫ алыу, ҡарағусҡыл төҫкә инеү. *Ҡарағусҡыллана башлаған эре башаҡтар түбән эйелгән. Остарында ынйы кеүек тамсылар йылтырап тора.* Ә. Вәли.

**ҠАРАҒЫЛТ** *с. диал.* Ҡарағусҡыл, ҡараһыу.

**ҠАРАЗ** [*ғәр.*] *и. иҫк.* Яуызлыҡ. *Һинән шул ҡараздан башҡа ни көтәһең инде.*

**ҠАРАЗИРӘ** *и.* Эт ҡарағаты һымаҡтар ғаиләһенә ҡараған, аҡ буранка сәскәле, киң киртләс япраҡлы, эре сәнскәкле, көп эсендә була торған ваҡ ҡына ҡара орлоҡло ағыулы үлән.

**ҠАРАЙ** *бәйл.* **1.** Төбәү килештәге һүҙҙәрҙән һуң килеп, хәрәкәттең йүнәлеш яғын белдерә; табан. *Алға ҡарай. Түбән ҡарай.* ■ *Йондоҙ ҡашҡа Арал диңгеҙе яғына ҡарай сабып сыға ла китә* (Әкиәттән). / Эш-хәрәкәттең башҡарылышы билдәле бер ваҡыт алдынан буласағын белдерә; табан. *Байрамға ҡарай. Төшкә ҡарай.* ■ *Кискә ҡарай ҡаланан тағы яңы хәбәрҙәр өҫтәлде.* Д. Юлтый.

**2.** *һөйл. ҡар.* **күрә** 2. *Заманына ҡарай эш итеү.*

● *Еренә ҡарай йыланы, тауына ҡарай боланы.* Мәҡәл.

**ҠАРАЙТЫЛЫУ** *к. төш. ҡар.* **ҡарайтыу.** *Ҡарайтылған ҡаш.*

**ҠАРАЙТЫУ** *к.* **1.** Ҡара төҫкә индереү, ҡара итеү. *Таҡтаны ҡарайтыу.* ■ *Сәстәре лә ҡара, керпеге лә, әллә Ҡара диңгеҙ ҡарайтҡан.* Я. Ҡолмой.

**2.** Кер ҡундырып бысратыу. *Күлдәкте ҡарайтыу.*

**3.** *кусм.* Яҡшы исемгә тап төшөрөү, бысратыу. *Юҡ инде, Тәнзилә еңгә .., һинең һыу бағың өсөн ил алдында исемемде ҡарайтып булмаҫ.* М. Тажи.

♦ **Йөҙ(ҙө) ҡарайтыу** йөҙөн ҡара итеү (*ҡар.* **йөҙ** [1]).

**ҠАРАЙЫУ** *к.* **1.** Ҡара төҫкә инеү, ҡара төҫ алыу. *Снарядтан емерелгән стеналар, пожарҙан ҡарайған өйҙәр, асыҡ түбәләр күңелгә шомлоҡ бирәләр.* Д. Юлтый. *Алмалар алланғандар, ҡарағаттар ҡарайғандар.* Т. Арслан. / Ел, ҡояш һ. б. тәьҫирендә ҡарағусҡыл төҫ алыу. *Бите ҡояшҡа янып ҡарайған.* ■ *[Соғаның] түңәрәкләп баҫылған уҡаһы иҫкереп, ҡарайып мишура булған.* Ғ. Дәүләтшин.

**2.** Ҡара төҫтә булыу, ҡара булып күренеү. *Ҡашы ҡарайып тора.* ■ *Алыҫтарҙан ҡарайып ай күренгән Ҡара төлкө тигән тау микән* (Халыҡ йырынан).

**3.** Кер ҡунып бысрау. *Ҡарайған күлдәк.* ■ *[Гөлбоҫтан:] Яҫтыҡ, мендәр тыштары ла туҙып, ҡарайып, йыртылып бөттө.* Ғ. Дәүләтшин.

**4.** *күсм.* Кеше теленә эләгеү, хурлыҡҡа ҡалыу.

♦ **Йән ҡарайыу** *ҡар.* **йән. Күҙ ҡарайыу** эшләй-эшләй эшләп бөтә алмай йәки көтә-көтә көтөп ала алмай аптырап бөтөү. *[Ҡарлуғас:] Ҡайҙа юғалдың шул тиклем оҙаҡ? Көтә-көтә күҙем ҡарайҙы.* Б. Бикбай.

● *Кем менән ҡарайғанһың, шуның менән ағар.* Мәҡәл.

**ҠАРАЙЫШЫУ** *к. урт. ҡар.* **ҡарайыу** 1, 2.

**ҠАРАКУЛ** *и.* **1.** Ҡыҫҡа ғына бөҙрә йөнлө, затлы һарыҡ тоҡомо. *Каракул һарығы. Каракул үрсетеү.*

**2.** Шул һарыҡтың бәрәстәреиән алынған ҡиммәтле тире. *Буҙ каракул. Ҡара каракул.* / *с. мәғ.* Шул теренән тегелгән. *Ҡаракул бүрек. Ҡаракул яға.*

**ҠАРАКУЛСЕЛЕК** *и.* Ҡаракүл һарыҡтары үрсетеү эше. *Ҡаракүлселек эше.*

**ҠАРАҠ** [1] *и.* **1.** Кеше малын урлау менән шөғөлләнгән кеше; бур. *Ат ҡарағы.* ■ *Бер ҡараҡ күршеһенең һарығын урлап, баҙарға алып барған* (Әкиәттән).

**2.** *иҫк.* Батша иҙгенлегенә ҡаршы баш күтәргән халыҡ көрәшсеһенә кәмһетеп әйтелә.

● *Ҡараҡ күҙенә ҡараңғы танһыҡ.* Мәҡәл.

**ҠАРАҠ** [2] *и. диал.* **1.** Күҙ, күҙ ҡараһы.

**2.** *эйл. ф.* **ҡарағым** Иркәләгәндә яратып әйтелә. *[Хан:] Ҡарактарым, һәр берегеҙ йылҡылар янына барып, йүгән шылтыратығыҙ.* «Заятүләк менән Һыуһылыу».

**ҠАРА-ҠАРШЫ** *р.* Береһенә икенсеһе ҡаршылаш, бер-береһенә ҡаршы. *Ҡара-ҡаршы осрашыу. Ҡара-ҡаршы килеү. Ҡара-ҡаршы ултырыу.* ■ *Ирҙәр ҡара-ҡаршы баҫып бик оҙаҡ һүҙһеҙ торҙо.* З. Биишева.

♦ **Ҡара-ҡаршы йырлау** бер-береңә яуап итешеп йырлау. **Ҡара-ҡаршы өй** *ҡар.* **өй** 1.

● *Байрам ашы ҡара-ҡаршы.* Әйтем.

**ҠАРАҠЛЫҠ** *и.* Урлашыу шөғөлө; бурлыҡ. *Ҡараҡлыҡта гәйепләү.* ■ *[Мәҡсүт] элек-электән ҡараҡлыҡ менән дан тотҡан ауыл.* Б. Бикбай.

**ҠАРАЛАЙ: ҡаралай көйөү** (*йәки* **яныу)** *шул уҡ* **ҡара көйөү (***ҡар.* **көйөү).** *[Инсебикә:] Ир ҡулында ҡайыш ҡамсы, ҡаралай көйә тәнең, шул тамуҡта тағы күпме сыҙаһын минең йәнем?* С. Ғәбиҙуллин.

**ҠАРАЛАМА** *и.* Ҡулъяҙманың аҡҡа күсерелмәгән тәүге һыҙмалары. *[Уҡытыусы уҡыусыларға] докладтың планын төҙөргә ярҙам итә, ҡараламаһын уҡып сыға.* М. Ғималова.

**ҠАРАЛАУ** *к.* **1.** Ҡараға буяу. *Ҡаралап биҙәк төшөрөү.*

**2.** *күсм.* Төрлө ғәйеп тағып кешене яман күрһәтеү; хурлау, насарлау. *Исемде ҡаралау.* ■ *Йыйылышта Сәлимде яҡлап, Шамилды ҡараларға тырышһалар ҙа булдыра алманылар..* Х. Мохтар.

**ҠАРАЛДЫ** *и.* **1.** (*йәки* **урын ҡаралдыһы)** Аҫҡа һала, түшәй торған нәмәләр. *Һандыҡ өҫтөнә төрлө ҡаралды — биҙәкле кейеҙҙәр, балаҫ-мендәрҙәр, яҫтыҡ-түшәктәр, юрған-сергеләр — ыҫпайлап өйөп ҡуйылған.* Ш. Шәһәр. **Ҡаралды бауы** урын ҡаралдыһын йыйып, ауманын өсөн тарттырып ҡуйырға эшләнгән суҡлы-биҙәкле яҫы бау. **Ҡаралды тартмаһы** *диал.* ҡаралды бауы.

**2.** (*йәки* **өй ҡаралдыһы)** Өй эсендә булған бөтә кәрәк-яраҡ. *Өй эсе ҡаралдыһынан бер нәмә лә ҡалманы. Һуғыш алдынан алған шаршауыбыҙ ҙа, ҡырҡ ҡорау булып туҙып бөткән.* Ғ. Дәүләтшин.

**ҠАРАЛЙЫМ** *с.* Ҡарағусҡыл, ҡараһыу. *Бына бер ваҡыт һауала, елгә ҡаршы тотолған ебәк таҫма кеүек, бер яғы оҙонораҡ, икенсе яғы ҡыҫҡараҡ ҡаралйым бер нәмә килә башлай.* М. Ғафури.

**ҠАРАЛТЫ** *и.* **1. (***йәки* **йорт ҡаралтыһы)** Ишек алдындағы кәртә-ҡура һәм башҡа ҡоролмалар. *Ағай-эне менән иҫке ҡаралтыларҙы төҙәттек, тирмәндәрҙе, тимерлектәрҙе рәткә килтерҙек.* И. Ғиззәтуллин. *Район .. төҙөкләнә һәм матурлана бара. Яңы культура йорттары, хужалыҡ ҡаралтылары һалына.* «Совет Башҡортостаны», 1986, 30 ғинуар.

**2. (***йәки* **донъя ҡаралтыһы)** Өйҙәге, хужалыҡтағы бөтә булған мөлкәт (аяҡлы малдан башҡа). *Ауылдың күп кешеләре донъя ҡаралтыларын, малдарын һатып ҡайҙалыр китә.* Б. Бикбай.

**ҠАРАЛТЫ-ҠУРА** *и. йыйн.* Йорт ҡаралтыһы. *[Малайҙар] яңы өй бураған, ҡаралты-ҡура яңыртҡан йорттарға инеп йөрөнөләр.* Ф. Әсәнов.

**ҠАРАЛЫ** *с.* Ҡара биҙәкле. *Аҡлы ситса күлдәк кейҙем, ҡаралыһын кеймәнем* (Халыҡ йырынан).

**ҠАРАЛЫҠ** [1] *и.* Йөндән үреп, осона суҡлап тәңкәләр, сулпылар тағып эшләнгән сәс үрмесе. *Ҡаралыҡҡайы ҡара ебәк, тороп һала ҡыҙҙар яурынға* (Халыҡ йырынан).

**ҠАРАЛЫҠ** [2] *и.* **1.** Ҡара төҫ, ҡара төҫтә булғанлыҡ. *Ҡашың ҡаралығы еткән, һөрмә тартаһың тағын* (Халыҡ йырынан).

**2.** Томана булған хәл, наҙанлыҡ. *[Хәйретдин:] Ҡаралыҡ — ҡара инде.. Ҡул ҡуйыуы көнө буйы таш ташығандан да ауырыраҡ [булды].* Я. Хамматов.

**3.** *күсм.* Оятлыҡ, хурлыҡ. *Йөҙгә ҡаралыҡ килтереү.*

**ҠАРАЛЫУ** [1] *к.* **1.** *төш. ҡар.* **ҡарау** 2, 3. *Ҡаралған фильм. Ҡаралған мәсьәлә.*

**2.** Хәрби хеҙмәт йәшенә еткәс комиссиянан үтеү. *Ҡаралырға китер алдан рекруттар гәҙәт-*

*тәгесә көн һайын кис, ятырҙа, урам буйлап йырлашып йөрөнө.* Ж. Кейекбаев.

**ҠАРАЛЫУ** [2] *к. диал.* Ҡарайыу, ҡараңғыланыу.

**ҠАРАМА** [1] *и.* Йылалар ғаиләһенә ҡараған оҙонсараҡ япраҡлы, йәйек ботаҡлы, ҡубып тора торған ҡытыршы ҡабыҡлы, эре ҡайышҡаҡ ағас. // *Ҡарама дуга.* ■ *Көҙ алдында .. ҡарама ҡабығынан яһалған аласыҡтар теҙелеп киткән.* М. Ғафури.

♦ **Ҡарама көлө һибеп ҡалыу** *шул уҡ* **[артынан] көл һибеп ҡалыу (***ҡар.* **көл). Артыңа ҡарама көлө** *шул уҡ* **артыңа көл (***ҡар.* **көл).**

● *Ишле ише менән, ҡарама ҡыуышы менән.* Мәҡәл.

**ҠАРАМА** [2] *и.* Сана табанының ҡара-ҡаршы тырнаҡтарын тоташтырған бөгәзе. *Баш ҡарама. Ҡарама бөгөү.*

**ҠАРАМАЙ** *бәйл.* Төбәү килеш формаһындағы исем ҡылымдан һуң килеп, кем йәки нәмәгәлер иғтибар итмәй эш иткәнде белдерә. *Эҫкол бай, ҡыш уртаһы булыуға ҡарамай, улының түйына ике тыу бейә, бер тыуса һимертте.* Ғ. Дәүләтшин.

**ҠАРАМАЙЫНСА** *бәйл. ҡар.* **ҡарамай.**

**ҠАРАМАҠ** *и.* **1.** Кем йәки ниндәйҙер ойошма, учреждениеның яуаплылығы, етәкселеге. *Лесхоз ҡарамағындағы урман. Завод ҡарамағына биреү. Комитет ҡарамағына тапшырыу.* ■ *Башҡорт АССР-ы үҙ ҡарамағындағы мәсьәләләрҙе үҙ аллы хәл итә.* «Башҡорт АССР-ының Конституцияһы», 1984. / Кемдеңдер күҙәтеүе, ҡарауы. *[Ҡунағымды] үҙ ҡарамағым аҫтында ғына ағас баҡсаһына алып инеп йөрөтә инем.* М. Ғафури. *Беҙҙең ҡарамаҡта биш йөҙҙән артыҡ һарыҡ, ике эт һәм бер ҡарт ат.* Ә. Бикчәнтәев.

**2.** Берәй эште хәл итеүгә кемгәлер ҡуйылған ирек, ихтыяр. *Ни ҡылһа ла үҙ ҡарамағында булыр.* ■ *Һәр көнгө юл уның [Новиков] тарафынан беҙҙең ҡарамаҡҡа ҡуйыла.* Д. Юлтый.

**ҠАРАМАҠҠА** *р.* **1.** Ҡарар күҙгә, ҡарап тороуға. *Тәү ҡарамаҡҡа.* ■ *Ҡарамаҡҡа шундай ауыр кәүҙәле булһа ла, ул [Ярулла] гәжәп еңел һөйәкле һәм ҡыҙыу ҡанлы.* Ш. Насыров.

**2.** Эйәлек килешендәге беренсе зат алмашынан һуң килеп, кешенең уйын, фекерен белдерә. *Минең ҡарамаҡҡа. Һинең ҡарамаҡҡа ул ниндәйерәк кеше?*

**ҠАРАМАЛАНЫУ** *к. төш. ҡар.* **ҡарамалау.**

**ҠАРАМАЛАТЫУ** *к. йөкм. ҡар.* **ҡарамалау.**

**ҠАРАМАЛАУ** *к.* Санаға ҡарама [2] ҡуйыу. *Бабай сана яһаны, табандарын үҙе бөктө, үҙе ҡарамаланы.* Ғ. Дәүләтов.

**ҠАРАМАЛАШЫУ** *к. урт. ярҙамл. ҡар.* **ҡарамалау.**

**ҠАРАМАЛЫҠ** *и.* Ҡарама [1] ағасы күп үҫкән урын.

**ҠАРАМАҪТАН** *бәйл.* Төбәү килеш формаһындағы исем ҡылымдан һуң килеп, кире һөйләмде баш һөйләмгә бәйләп, ҡапма-ҡаршылыҡ мөнәсәбәтен бирә. *Йәш булыуға ҡарамаҫтан. Йылдар үтеүгә ҡарамаҫтан.* ■ *Халыҡ күп булыуға ҡарамаҫтан, бында әҫе түгел, һалҡынса.* С. Агиш.

**ҠАРАМЫҒЫУ** *к. һөйл.* Күҙ һеҙөлөп, йоҡоға иҫереү. *[Асия:] Мин батшаны өс көн, өс төн һөйләндереп, әүрәтеп ултырырмын. Тамам ҡарамығып бөткәс, ҡасырбыҙ* (Әкиәттән).

**ҠАРАМЫҠ** *и. һөйл.* Тиф.

**ҠАРАМЫҠЛАНЫУ** *к. диал.* Томаланыу, ҡараңғыланыу (күҙгә ҡарата).

**ҠАРАМЫШКА** *р. диал.* Ҡарамаҡҡа.

**ҠАРАН** *и.* **1.** Туңмай ағып ята торған шишмә йәки бәләкәй йылға. *Умарталыҡ өсөн урыны һәйбәт: йүкә урманы, эргәлә генә һалҡын ҡаран, бәләкәй генә ҡул дә бар.* «Ағиҙел», 1967, № 3.

**2.** Һыуҙың йылылап туңмай ятҡан ере; йылыу.

**ҠАРАНЛАУ** *к.* Туңмай ятыу; йылыулау.

**ҠАРАНЫУ** *к.* Ян-яҡҡа күҙ йөрөтөү, тирә-яҡҡа ҡараш ташлап күҙәтеү. *Алан-йолан ҡараныу.* ■ *Закир ялт-йолт ҡаранып, башта йәшел баҙарҙа йөрөнө.* З. Биишева.

**ҠАРАҢҒЫ** *с.* **1.** Яҡтылыҡ төшмәгән, яҡты булмаған. *Айһыҙ ҡараңғы төн. Күҙгө ҡараңғы төн. Ҡараңғы булмә. Дөм ҡараңғы. // Таң ҡараңғыһы. Эңер ҡараңғыһы.* ■ *Бара торғас, ул [Аҡъял батыр] әҙәм үткеһеҙ ҡуйы, ҡараңғы урманға килеп сыҡҡан* (Әкиәттән). *Өйҙәгеләр .. шәмде һүндереп ҡараңғыла ҡайғырыштылар.* Һ. Дәүләтшина. **Ҡараңғы ҡатыш** яҡтырыр-яҡтырмаҫтан. *Өмә көнө халыҡ бер-бер артлы эйәртенешеп, ысыҡ кипкәнен дә көтөп тормай, ҡараңғы ҡатыш яланға сыҡты.* Я. Хамматов. **Ҡараңғы төшөү** ҡояш байып, кис булып, төн ҡараңғыһы килеү. *Әхмәт төнгә тиклем шунда, һыу буйындағы ҡамышлыҡтар, таллыҡтар араһында ятты. Ҡараңғы төшкәс, Татырлы йылға ягына йүгерҙе.* И. Көҫәпҡол. **Таң ҡараңғыһынан** *ҡар.* **таң** [1].

**2.** *күсм.* Асыҡ түгел, билдәһеҙ. *Уларҙың [ҡулға алынған һалдаттарҙың] ҡайҙа булғаны, үлеме-тереме икәне ҡараңғы ине.* М. Ғафури.

**3.** *күсм.* Ауыр тәьҫир ҡалдырған, күңелһеҙ, насар. *Ҡараңғы уйҙар. Ҡараңғы тормош.* ■ *А. Таһиров тәүге әҫәрҙәрендә үҙе йәшәгән осорҙоң иң ҡараңғы яҡтарын .. — иҙелгән, һатылып йөрөтөлгән ҡатын-ҡыҙҙарҙың ауыр хәлен тасуирланы.* Ә. Вахитов.

**4.** *күсм.* Наҙан, культураһыҙ, артта ҡалған. *Дәүләкән станцияһы. Был элек бер ҡараңғы мөйөш булған.* Д. Юлтый.

♦ **Ҡараңғы сырай** бошонҡо йәки асыулы йөҙ.

**ҠАРАҢҒЫЛАНДЫРЫУ** *к. йөкм. ҡар.* **ҡараңғыланыу.**

**ҠАРАҢҒЫЛАНЫУ** *к.* **1.** Ҡараңғыға әйләнеү. *Көн ҡараңғыланды.* ■ *Йәйге төн нисектер бик ҡапыл килә. Әле генә яҡты була, оҙаҡ та үтмәй ҡараңғыланып та китә.* Ә. Вәли. / Ҡараһыу төҫкә инеү. *Ташлы тауҙар, бейек ағастар артына төшөп барған ҡояштың һүңгы ҡыҙғылт нурҙары аҫтында уйнап ятҡан Ағиҙелдең төҫө үҙгәрҙе, ҡараңғылана башлаған кеүек булды.* Ш. Шәһәр.

**2.** *күсм.* Ауыр хис, күңелһеҙлек менән ҡапланыу. *Йөҙ ҡараңғыланыу.*

♦ **Күҙ алды ҡараңғыланыу** *ҡар.* **күҙ.**

**ҠАРАҢҒЫЛАТЫУ** *к. йөкм. ҡар.* **ҡараңғылау.**

**ҠАРАҢҒЫЛАУ** *к.* **1.** Яҡтылыҡты ҡаплап, ҡараңғы итеү. *Өйҙө ҡараңғылау.* ■ *[Тимер] күҙ*

*алдын ҡараңғылаған нәмәнелер һыпырып ташларға теләгәндәй, уң ҡулын болғап ҡуйҙы.* Б. Бикбай.

**2.** *күсм.* Күңелһеҙлек, ауырлыҡ килтереү. *Яҡты тормошто ҡараңғылап торған күренештәр.*

**ҠАРАҢҒЫЛЫҠ** *и.* Ҡараңғы булған хәл.

**ҠАРАҢҒЫЛЫ-ЯҠТЫЛЫ** *с.* Ни ҡараңғы, ни яҡты булмаған, яртылаш ҡараңғы. *Ҡараңғылы-яҡтылы ваҡыт. // Бөгөн дә малайҙар сумкаларын арҡаларына аҫып, саңғыларын кейеп, ҡараңғылы-яҡтылы юлға сыҡты.* Р. Ғабдрахманов.

**ҠАРАҢЛАУ** *к. һөйл.* Ауырлыҡ, ҡыйынлыҡ кисереү; ыҙаланыу. *Крәҫтиәндәрҙең йәй буйы ҡараңлап үҫтергән иген аҡсаһын ул [отош уйыны] еңел генә кеҫәһенә тултыра.* Ғ. Дәүләтшина.

**ҠАРАР** [*ғәр.*] *и.* **1.** Уйлау, кәңәшләшәү һөҙөмтәһендә бер нәмә эшләү ниәте менән яһалған һығымта. *[Зыяға] ҡыш уртаһынан курортҡа китергә тура килмәне. Яҙға тиклем сыҙап торорға, мәктәптә уҡыуҙар бөткәс тә Сәғиҙә менән икәүләп барырға тигән ҡарарға килделәр.* М. Тажи.

**2.** Рәсми һәм мәжбүри төҫ алған дөйөм фекер.. *Йыйылыш ҡарары. Суд ҡарары. Съезд ҡарары. Ҡарар ҡабул итеү. Ҡарар сығарыу.*

**3.** *иҫк.* Торор урын. *Ҡарар табыу.*

□ **Ҡарар итеү** (*йәки* **ҡылыу**) 1) ниҙер эшләргә билдәле бер фекергә килеү. *Беҙ бөгөн метрға күсергә ҡарар иттек.* С. Агиш; 2) рәсми һәм мәжбүри булған дөйөм фекер белдереү. *Профсоюз комитетының ҡарары.*

**ҠАРАРЛАНЫУ** *к. иҫк.* Урынлашыу, урында тороу. *Бер ай миҡдар ҡарарланып кирегә дүнделәр.* «Башҡорт шәжәрәләре», 1960.

**ҠАРАРЛАУ** *к.* Ниҙер эшләү хаҡында уйлап, бер төрлө фекергә килеү. *[Үмәр карт] мәһәрҙе күберәк һорарға ҡарарлай.* Һ. Дәүләтшина.

**ҠАРАСА**[1] *и.* Көҙгө ҡара һыуыҡ миҙгеле. *Ҡараса килмәй көҙ булмаҫ, ҡаңтар килмәй боҙ булмаҫ.* Һынамыш.

**ҠАРАСА**[2] *и. шул уҡ* **ҡара өйрәк** (*ҡар.* **өйрәк** 1).

**ҠАРАСАЙ** *и.* Ҡарасай-Черкес Автономиялы өлкәһендә йәшәүсе халыҡтарҙың береһе һәм шул халыҡтың бер кешеһе (төрки телдәрҙең береһендә һөйләшә). *Ҡарасай халҡы. Ҡарасай ҡатыны.*

**ҠАРАСАЙ-БАЛҠАР: ҡарасай-балҡар теле** ҡарасайҙар һәм балҡарҙар теле (төрки телдәрҙең береһе).

**ҠАРАСБАЙ** *и. диал.* Ҡарасман.

**ҠАРАСҠЫ** *и.* **1.** Ҡош-ҡортто өркөтөү өсөн, кеше рәүешендә яһап, баҡсаға, баҫыуға ҡуйған нәмә. *Баҡсаға турғай эйәләшкәндә ҡарасҡы ҡуйғандарын Булаттың .. күргәне бар ине.* Ш. Насыров.

**2.** *мыҫҡ.* Һалбыр, килешһеҙ кейем кейгән кешегә ҡарата. *Местпром костюмын алдым, кейгәс ҡарасҡы булдым.* Т. Арслан.

**3.** *күсм.* Алыҫта йәки ҡараңғыла тоноҡ ҡына булып күренгән нәмәнең шәүләһе. *Алда ике ҡарасҡы күренде. Бик яҡын. Үҙҙәре килгән кеүек була.* Д. Юлтый.

**ҠАРАСҠЫЛ**[1] *с.* Ҡара төҫкә тартым; ҡараһыу. *Бейек ҡарағайҙың ҡарасҡыл баштары .. ҡара болотҡа оҡшай.* С. Агиш.

**ҠАРАСҠЫЛ**[2] *и. диал. ҡар.* **ҡарасҡы** 3. *Алыҫта, .. донъяны ҡаплап алған ап-аҡ ҡар өҫтөндә, бер-ике ҡарасҡыл күренде.* Ғ. Дәүләтшин.

**ҠАРАСҠЫЛАНЫУ** *к.* Ҡарасҡы (3 мәғ.) булып күренеү. *Ҡарасҡыланып тороу. Ҡарасҡыланып торған ағас.*

**ҠАРАСҠЫЛТ** *с. ҡар.* **ҡарасҡыл**[1]. *Татлыбайҙың битендәге ҡарасҡылт ҡыҙыллыҡ артты, күҙҙәре теремекләнеп китте.* Ш. Шәһәр.

**ҠАРАСМАН** *и.* Ҡара кешегә йәки ҡара төҫтәге малға ҡарата ҡулланыла. *Яныл торған сылт ҡара ул [колон], ял-ҡойроғо ялтырай .. һай, ҡарасман, ҡалай һомғол, юртҡан була бит әле!* Р. Ғарипов.

**ҠАРА́Т** [*рус.* < *ғәр.* | *и.* Аҫыл таш үлсәй торған үлсәү берәмеге, 0,2 г-ға яҡын. *Ҡартты бер нисә ҡарат алмас менән тотоп алалар.* Ф. Лоҡманов.

**ҠАРАТА** *бәйл.* (*төбәү клш. менән*) **1.** Эш-хәрәкәттең йүнәлешен белдерә; табан, ҡарай. *Айбулат уң ҡулын .. уға [Кәүи эфәндегә] ҡарата һелтәп һөйләй.* Һ. Дәүләтшина.

**2.** Эш-хәрәкәттең, тоҫҡалышын, берәй нәмәгә бәйләнешен белдерә. *[Тимер:] Дошманға ҡарата аяуһыҙлыҡ, аяуһыҙлыҡ кәрәк.* Б. Бикбай. *Сәғиҙә Мансурға ҡарата бер эксперимент ҡулланып ҡарарға булды.* М. Тажи.

**3.** Эш-хәрәкәттең берәй хәл-ваҡиғаға мөнәсәбәте менән башҡарылғанын белдерә. *Байрамға ҡарата сығарылған газета.*

**4.** Ике нәмә араһындағы мөнәсәбәтте белдерә; күрә. *Көсөңә ҡарата йөкләмәң. Эшенә ҡарата хаҡы.*

**ҠАРАТАШ** *и.* Ҡара йәки ҡара-һоро төҫтәге минерал (ҡәләм, электр кәрәк-ярағы яһау өсөн ҡулланыла); графит.

**ҠАРАТҮШ** *и. һөйл.* Оҙон аяҡлы, оҙон суҡышлы, һорғолт ҡом төҫөндәге ҡош (һыу буйында була).

**ҠАРАТЫУ** *к. йөкм. ҡар.* **ҡарау** 1—4, 7, 8. *Мал ҡаратыу. Умарта ҡаратыу. Врачтан ҡаратыу. Фильм ҡаратыу. Өйҙә көнъяҡҡа ҡаратып һалыу. Мәсьәләне йыйылышта ҡаратыу.* ■ *Ҡунаҡ күрергә саҡырылған кешеләр төштән һуң килергә тейеш булғанлыҡтан, бөтә эш шуға ҡаратып эшләнде.* Ғ. Дәүләтшин. *Эшкә тора республикам. .. Эшсе өйҙәр ҡояшҡа ҡаратып тәҙрә асты.* Ғ. Сәләм.

◆ **Ауыҙға ҡаратыу** *ҡар.* **ауыҙ. Үҙеңә ҡаратыу** 1) берәй кешене үҙ яғына ауҙарыу, үҙенә ышандырыу. *Тәүҙә батша ҡатыны бер ҙә ышанғыһы килмәй тора. Мәскәй уны бик тиҙ үҙенә ҡарата* (Әкиәттән); 2) кемделер үҙенә ғашиҡ иттереү. *[Нигмәтулла — Хәкимгә:] Буйҙаҡһың, Гөльямал да яңғыҙ. Төҫ тиһәң төҫө, һын тиһәң һыны бар.. Үҙеңә ҡаратырға тырыш.* Я. Хамматов.

**ҠАРАУ** *к.* **1.** Күҙҙе ҡайҙа йәки нимәгәлер йүнәлтеү. *Ян-яҡҡа ҡарау. Боролоп ҡарау. Күтәрелеп ҡарау. Һирпелеп ҡарау. Тура ҡарау.* ■ *Зөлкәрнәй ҡапыл һиҫкәнеп, Зөлхизәне ҡосағынан ысҡындырған да, ялт-йолт ҡарап алған.* Н. Иҙелбай. *Хажисолтан бай күҙенең ағын әйләндереп ҡарап, старостаны киҫәтеп әйтте.* Я. Хамматов. *Туҡал үгеҙ ят кешегә ҡан баҫҡан*

*күҙенең ҡырыйы менән генә ҡарап алды.* Х. Ғиләжев. *Бер ҡараһам һиңә, күңелем була, бер йылмайып ҡуйһаң ни була* (Халыҡ йырынан). **Тишерҙәй итеп ҡарау** ныҡ теклəп ҡарау. **Тултырып ҡарау** күҙҙе ҙур асып, теклəп ҡарау. / Иғтибар итеү, күңел менән ҡараш ташлау. *Кеше ҡарар һыны юҡ.* ■ *Йәрҙәр итәм яттарға ҡарамаһаң* (Халыҡ йырынан). / Ҡараштa ниндәйҙер эске кисереште, уй-тойғоно сағылдырыу. *Ашарҙай булып ҡарау. Йотлоғоп ҡарау. Күҙ алмай ҡарау. Мөлдөрәп ҡарау.* ■ *Әхмәтов улар артынан һөҙөп ҡарап алды.* С. Агиш. *Ул өндәшмәй генә миңә теклəп ҡарап ята.* С. Кулибай.

**2.** Тамаша итеү, күҙәтеү. *Кино ҡарау. Спектакль ҡарау.* ■ *Бала-саға, ут ҡарарға тип, ҡоймаларға, өй баштарына менеп китте.* М. Тажи. *Кейәүҙәре һуғыша, ә батша үҙе ҡарап тора* (Әкиәттән). / Танышыу, белеү, тикшереү өсөн күҙҙән үткәреү. *Альбом ҡарау. Китап ҡарау. Газеталарҙы ҡарап сығыу. Мәҡәләне ҡарау.* / Умарта, ау кеүек нәмәне тикшереү. *Ауҙы ҡарау. Умартаны ҡарап бал алыу.* ■ *Ҡапҡан һалдым Ҡараташҡа күк бүрене алам тип, ҡапҡанымды ҡарағансы, бүре ашаған бейәмде* (Халыҡ йырынан). / Ауырыу, сирле кешене тикшереү, сирҙең булыу-булмауын билдәләү. *Ауырыу кешене ҡарау. Врач спортсмендарҙы ҡараны.* ■ *Зәйнәпте Мәскәүгә ебәрҙеләр, өлкән профессорҙар ҡараны.* Ғ. Сәләм. *Беҙҙе ҡарап бөтөргәс тә казармаға яптылар* (Бәйеттән).

**3.** Тикшереп асыҡлау, асыҡлап хәл итеү. *Ғаризаны ҡарау. Яҙғы сәсеү мәсьәләһен ҡарау.* ■ *Хәҙер был фирҡәнең ниҙән ғибәрәт икәнен ҡарайыҡ.* Һ. Дәүләтшина.

**4.** Кем йәки нәмәгәләр эйәреү, өлгө йәки сығанаҡ итеп алыу. *Һүрәткә ҡарап эшләү.* ■ *Ҡарап бесергә күлдәк һорап Ныяҙғол байҙарға барыуҙы уйларға ла ярамай ине.* Һ. Дәүләтшина. *Инә ҡаҙ ҙа, ата ҡаҙ ҙа, уларға ҡарап бәпкәләр ҙә һис йылғаға төшмәй, ти* (Әкиәттән). / Кем йәки нәмәгәләр иғтибар итеү, иҫәпкә алыу; эш иткәндә кем йәки нимә менәндер иҫәпләшеү. *Кеше һүҙенә ҡарау. Хаҡына ҡарамай алыу.* ■ *Шәрифә әбей орошоп та, асыуланып та, илап та ҡараны, Тимербулат бер нәмәгә лә ҡараманы.* Һ. Дәүләтшина. *Кеше .. алдағы көнөнә ҡарап йәшәргә тейеш.* М. Тажи. **Бер нигә (*йәки* нәмәгә) ҡарамай** һис нәмәне иҫәпкә алмай, бер нәмәгә лә иғтибар итмәй. *Бер нәмәгә ҡарамай уҡырға тырышыу.* / *күсм.* Нимәнелер маҡсат итеп тотоу, иғтибарҙы йүнәлтеү. *Үҙ файҙаңды ҡарау.* **Йыйын (*йәки* яғын) ҡарау** исем ҡылым менән килеп, берәй эшкә күңел йүнәлтеүҙе белдерә. *Китеү яғын ҡарау.* ■ *[Әбей — улына:] Илгә сығып, өҫ-башыңды әҙерәк бөтәйтеп, әҙ булһа ла аҙыҡ-түлек алып ҡайтыу яйын ҡарар инең* (Әкиәттән). *[Әмирханов:] Мөмкин тиклем, аҡсаға түгел, тауарға алыштырыу яғын ҡарағыҙ.* С. Агиш.

**5.** Ниндәйҙер мөнәсәбәттә, уй-фекерҙә булыу. *Дөрөҫ ҡарамау.* ■ *Хәҙерге ауыл ярлылары советҡа күп килә. Бер файҙалы эш эшләмәһәк, улар беҙҙән биҙә лә башлар. Һин шуға нисек ҡарайһың, ҡустым.* Ғ. Дәүләтшин. / Иҫәпләү, һанау. *Үҙ итеп ҡарау.* ■ *Тәүҙә уны [Таңатарҙы] сит кеше тип ҡарағандар.* Ә. Вахитов.

**6.** Тейешле хеҙмәт күрһәтеү, тәрбиә итеү, тәрбиәләү. *Бала ҡарау. Сирле кешене ҡарау. Мал ҡарау.* ■ *[Фатима:] Мин уларҙы тыуған көндәренән бирле ҡарайым. Мин генә ҡарарға тейешлеме инде?* Ш. Шәһәр. / Ниндәйҙер эштең хәстәрен күреү, шул эшкә яуаплы булыу. *Йорт ҡарау. Өй эшен ҡарау.* ■ *Һин нисек булһа ла шунда берәй эш табып, үҙ тамағыңды үҙең туйҙыр, өҫ-башыңды үҙең ҡара, улым.* Ғ. Ғүмәр.

**7.** *күсм.* Кем йәки нәмәнелер табыу маҡсатында эҙләү. *Үҙ профессияң буйынса эш ҡарау. Урмандан сығырға юл ҡарау. Үҙенә тиң иптәш ҡарау.* ■ *Уҡытыусы кеше үҙе кеүегерәкте ҡарайҙыр инде ул.* М. Тажи.

**8.** Йөҙ менән билдәле бер яҡҡа йүнәлгән булыу. *Өйҙөң алты тәҙрәһе бейек террасаға ҡарай.* Һ. Дәүләтшина.

**9.** *күсм.* Кем йәки нәмәгәләр мөнәсәбәтле, бәйләнешле булыу. *Ауыл хужалығына ҡараған мәсьәлә.*

**10.** *күсм.* Таяныс итеп күреү, өмөт бәйләү. *Балаға ҡарап ҡалыу. Ышаныс менән ҡарау.* ■ *Аҡназар иттән шыпа өҙөлдө. Ҡарап ҡына торған яңғыҙ һыйыры һыуалып китте.* Ғ. Дәүләтшин. *[Үмәр:] Ҡалай итеп мин шул кешегә берҙән-бер, ҡарап торған ҡыҙымды бирәйем ти.* Һ. Дәүләтшина. *Ташландыҡ өйҙә бер яңғыҙым кемгә ҡарап үлермен.* Б. Бикбай.

**11.** *бойр. ф.* Ғәжәпләнеү, һоҡланыу кеүек хисте белдергәндә әйтелә. *[Ғариф:] Көйәләнә инең. Ҡара, ниндәй кәттә ыңғырсаҡ булды.* Б. Бикбай. /Киҫәткәндә, иҫкәрткәндә әйтелә. *Ҡара, эшкә һуңлайһы булма.*

**12.** *-п* формаһындағы хәл ҡылымға ҡушылып эш-хәрәкәттең ниҙелер һынау, белеү маҡсатында башҡарылғанын белдерә. *Ашап ҡарау. Тартып ҡарау. Яҙып ҡарау. Аштың тоҙон тәмләп ҡарау.* ■ *Һунарсы ғәжәпләнеп төймәне тотоп ҡарай, тотҡан һайын теге матурлана, ти* (Әкиәттән). **Ҡара уны** киҫәткәндә, янағанда әйтелә.— *Килмәй ҡалһаң, ҡара уны, үпкә ҙур булыр.* Б. Бикбай.

**13.** *һөйл.* Хәл ҡылымдың *-п* формаһында эш-хәрәкәттең йүнәлешен белдереп, бәйләүес функцияһын үтәй; табан, ҡарай. *Урманға ҡарап сапты.*

♦ **Алды-артыңа ҡарағансы** бик тиҙ, һә тигәнсе. *[Сәлмән] утын ҡырҡырға тотондомо — алды-артыңа ҡарағансы бер йөк утын өйөп тә ҡуя* (Әкиәттән). **Алдын-артын ҡарамай** 1) һис ни уйламай. *Бөтә кош-ҡорт, өй, ҡыр йәнлектәре алдын-артын ҡарамай киләсәккә, яҡтыға ынтылып, мыж килеп эшләп ята.* Ғ. Дәүләтшин; 2) һис ни күрмәй, алға йомолоп. *Ҡарағөләмбәт ҡасып һинән тороп китте, алдын-артын ҡарамай йүгереп китте.* «Бабсаҡ менән Күсәк». **Баш ҡарау** сәсте аралап бет, һеркә эҙләү. *[Мәскәй] Килтәймәргәндең һеңлеһенә баш ҡарарға ҡушҡан* (Әкиәттән). **Бер ҡарауҙа** бик тиҙ, шунда уҡ. *Колхозға ҡаршы ҡотҡо тараҡҡан кешеләрҙе бер ҡарауҙа һиҙеп ала ул [Тайфуров].* М. Тажи. **Дәрес ҡарау** өйгә биргән эште эшләү, дәрес әҙерләү. *Өй эсе тын. Бер тауыш юҡ. Дәрес ҡарай апайым.* Ә. Вахитова. **Күҙгә ҡарап ҡалыу** кемдеңдер ярҙамына мохтаж булыу. *Кеше күҙенә ҡарап ҡалыу.* **Кү-**

**ҙеңде асып ҡара** берәй күренеп торған нәмәне күрмәгәндә йәки яңылыш күргәндә әйтелә. *[Өй хужаһы:] Был ҡарға балаларын ҡайҙа алып бараһың? [Ғариф:] Таптың ҡарға, күҙеңде асып ҡара, беҙҙең ауылдың кәмиссәрҙәре бит улар!* Б. Бикбай. **Күҙгә [тура] ҡарап** *ҡар.* **күҙ. Күҙгә ҡарау** (*йәки* **ҡарап тороу**) түбәнселек, кеселеклек күрһәтеп, һәр һүҙҙе үтәргә әҙер тороу. **Күҙ ситє (***йәки* **ҡойроғо) менән ҡарау** *ҡар.* **күҙ. Күрә ҡарау** алыҫтан күрмәгән кешегә ҡарата әйтелә. *[Ҡыҙылармеец:] Бер аҡ офицерҙы ҡыуып еттем. Күҙен сылт-сылт йомоп нағандан ата ла ата. Әлләә күрә ҡарау кеше булды инде, мине күрмәгән кеүек тойолдо.* А. Таһиров. **Ҡайҙа ҡараһаң да** бөтә ерҙә, бөтә тирә-яҡта. *Ҡайҙа ҡараһаң да ир-ат ҡулы юҡлығы күренеп тора.* Б. Бикбай. **Ҡара инде** аптырау йәки һоҡланыуҙы белдерә. *[Ғүмәр:] Йә, йә, ҡара инде, бөтә кеше сәсеүгә сығып китте, ул һаман йоҡлай.* Д. Юлтый. **Ҡара ла тор** берәй эш-хәлдең буласағын мотлаҡ белдереү өсөн әйтелә. *[Яланбикә:] Үҙеңде ошаҡламаһаммы, ҡара ла тор.* Һ. Дәүләтшина. **Ҡарап ҡарау** һынап ҡарау мәғәнәһендә, бер төрлө бәхәскә ингән һымаҡ итеп әйтелә. *[Әбйәлил:] Тәүҙә һин үҙең әйләнеп сыҡ, шунан мин ҡарап ҡарармын* (Әкиәттән). **Ҡарар күҙгә** *ҡар.* **күҙ. Ҡарап торам да** берәй нәмәне күҙәтеп, һығымта яһаған һымаҡ иткәндә әйтелә. *[Юлия:] Бына ҡарап торам да русса һөйләүегеҙ ҙә бик яҡшы.* Һ. Дәүләтшина. **Ҡарап туймаҫлыҡ** бик матур тигән мәғәнәлә әйтелә. *Газетаға һүрәтте ул төшөрһә, ҡарап туймаҫлыҡ була.* И. Ниғмәтуллин. **Ҡара һин уны** берәй нәмәгә ғәжәпләнгәндә, һоҡланғанда әйтелә. *Ҡара һин уны, ҡайһылай оҫта йырлай.* **Ҡара әле** 1) иғтибарҙы тартыу өсөн әйтелә. *[Йылҡыбай:] Ҡара әле, беҙҙе белгән кешеләр ҙә бар икән дә баһа* (Әкиәттән); 2) ғәжәпләнгәндә әйтелә. *[Айыуголаҡ:] Ҡара әле, дуҫтар мине ниндәй һағынған* (Әкиәттән). **Ҡыйып ҡарағыһыҙ** бик матур, бик яҡшы, төҙөк тигән мәғәнәлә әйтелә. *[Заһира:] Йә, бынау ҡыйып ҡарағыһыҙ донъямды кемгә ҡалдырам инде.* Н. Мусин. **Ҡырын ҡарау** *шул уҡ* **ҡырын күҙ менән ҡарау (***ҡар.* **күҙ). Ни ҡарап** ниңә, тигән мәғәнәлә шелтә рәүешендә әйтелә. *Ни ҡарап ултыраһың әҙерләнмәй.* **Тәү ҡарауҙа (***йәки* **ҡарағанда)** тәүге тәьҫорат буйынса. *Һалынып торған ялбыр ҡашлы был кеше тәү ҡарауҙа ниндәйҙер ҡурҡыныс кеше һымаҡ тойола.* Б. Бикбай. **Уның ҡарауы** *ҡар.* **ҡарыу** [3]. **Үҙ юлыңды ҡарау** 1) үҙ файҙаңдан сығып эш итеү; 2) кешене берәй эштән бушатҡанда, ҡыуғанда әйтелә.— *Йомош юлға йөрөһөн, булмай икән, үҙ юлын ҡараһын.* Һ. Дәүләтшина. **Үрә ҡарау** *йәки* **үрә ҡарап йөрөү** үҙеңде ҙурға ҡуйып, маһайып йөрөү. *[Өммиә — Фәйрүзәгә:] Бәхет танышыу-табышыуҙан башлана ул. Кешеһе тура килгәндә үрә ҡарап үтергә ярамай бер ҙә.* Ғ. Әхмәтшин. **Үтә ҡарау** яҡындан күрмәгән күҙ. *Үтә ҡарау булыу.* **Әҙәм ҡарағыһыҙ** бик ямаҡ, бик йәмһеҙ тигән мәғәнәлә әйтелә. *[Малай] тупраҡ һибешеп, батҡаҡ сәсрәтешеп, өйгә әҙәм ҡарағыһыҙ булып ҡайтты.* Р. Низамов. **Әйләнеп ҡарамаҫлыҡ булыу** бик ныҡ биҙеү, биҙәр булыу. **Яҡшы күҙ менән ҡарау** яҡшы мөнәсәбәт белдереү. *Ҡыҙрас батшаны шәбәйтһә лә батша һаман уға яҡшы күҙ менән ҡарамай, ти* (Әкиәттән). **Яман күҙ менән ҡарау** насар мөнәсәбәт белдереү.

● *Ат арымай тау менгәнгә, арымай юртып килгәнгә, арый ҡарай белмәгәнгә.* Әйтем. *Асыҡҡан ат ҡулыңды ялай, яраҡан ат күҙеңә ҡарай.* Әйтем. *Атаһына ҡарап улын ҡос, инәһенә ҡарап ҡыҙын ҡос.* Мәҡәл. *Ҡарағайға ҡарап тал үҫер.* Мәҡәл. *Юғарыға ҡарап фекер ит, түбәнгә ҡарап шөкөр ит.* Мәҡәл.

**ҠАРАУЛЫ** *с.* Ҡарап, тәрбиәләп тотоулы; тәрбиәле. *Ҡараулы баҡса. Ҡараулы бала. Ҡараулы мал.*

**ҠАРАУСЫ** *и.* **1.** Күҙәтеп, тәрбиә итеп торған кеше. *Ат ҡараусы. Һыйыр ҡараусы. Мал ҡараусы. Бала ҡараусы. Мәктәп ҡараусы.* ■ *Бына бер ваҡыт батша ҡыҙы үҙенең ҡараусылары менән ер аҫтынан килеп сыҡҡан* (Әкиәттән).

**2.** Тамаҡҡа, өҫкә етештереп, аҫрап торған кеше.

**ҠАРАУСЫҺЫҘ** *с. ҡар.* **ҡарауһыҙ.** *Ҡараусыһыҙ ҡалыу.*

**ҠАРАУҺЫҘ** *с.* Ҡараусыһы, тәрбиәләүсеһе булмаған; тәрбиәһеҙ. *Ҡарауһыҙ өй. Ҡарауһыҙ донъя. // Ҡарауһыҙ үҫеү.*

**ҠАРАУЫЛ** [1] *и.* **1.** Берәй нәмәнең именлеген, теүәллеген тәьмин итеү өсөн ҡуйылған һаҡ. *Ҡарауылға ҡуйыу. Ҡарауылда тороу.* ■ *[Әхмуш:] Иптәш Билалов, бына ҡарауылда бер ҙә хеҙмәт көнө юҡ бит әле.* Д. Исламов. *Ҡарауылда баҫып тороп тирә-яҡты һаҡланыҡ* (Бәйеттән).

**2.** Шул һаҡта торған кеше. *Ҡарауыл ҡуйыу. Ҡарауылды алмаштырыу.* / Ниҙе лә булһа һаҡлау хеҙмәтен үтәгән ҡоралы төркөм. *Ғәскәри ҡарауыл. Ҡарауыл бүлмәһе. Ҡарауыл башлығы.*

◆ **Ҡарауыл өйө** революцияға тиклемге Рәсәйҙә эре ауылдарҙа ваҡытлы рәсми эштәр өсөн тотолған махсус өй. *Ауыл схуты тиҙ йыйылды. Ҡарауыл өйөнөң ишеге шағырлап асыла ла,.. халыҡтар шығырым булып өйгә тула.* А. Карнай. **Ҡарауыл һалыу** *йәки* **һалып ҡысҡырыу** 1) ҡотҡарырға, ярҙамға саҡырып һөрәнләү; 2) ризаһыҙлыҡ белдереп, тауыш-ғауға күтәреү. *«Ваталар, емерәләр, ягалар!» — тип, сат һайын ҡарауыл һалдылар.* Б. Ишемғол. **Ҡарауыл һымаҡ баҫып тороу** ҡуҙғалмай ниҙер янында тороу. *«Онот, тинем бит инде. Етте! Онот!» — тине Хәбибуллин йөҙөн йыйырып. «Ярай улайһа, сәнселеп китһен. Оноттом»,— тине өҫтәл янында ҡарауыл һымаҡ баҫып торған апаһы.* Х. Ғиләжев. **Хөрмәт ҡарауылы** хөрмәт белдереү өсөн теҙелгән саф (ситтән килгән дәүләт башлыҡтары йәки үлгән кешеләр хөрмәтенә һ. б. ҡуйыла). *Генерал хөрмәт ҡарауылына баҫты. Дары, ҡором еҫтәре һеңгән паппаһын сисеп, Крепактың йөҙөнә ҡарап тынып ҡалды.* Ә. Ихсан.

**ҠАРАУЫЛ** [2] *и.* Мылтыҡтың көбәк осондағы тоҫҡап атыуға хеҙмәт иткән сөйө.

**ҠАРАУЫЛЛАТЫУ** *к. йөкм. ҡар.* **ҡарауыллау.** *Келәтте ҡарауыллатыу.*

**ҠАРАУЫЛЛАУ** *к.* **1.** Берәй нәмәнең именлеген, теүәллеген һаҡлау; ҡарауыл булыу. *Батша бөтә батырҙарҙы, бағымсыларҙы саҡыртып, ҡыҙының яңы ғына тыуған балаһын ҡарауыллаларға ҡушҡан* (Әкиәттән).

**2.** Күҙ һалып һағалау; күҙәтеү. *«Һеҙ ошо тишектең ауыҙын ҡарауыллағыҙ, ә мин түбән төшөп, шул ҡартты эҙләп табайым»,— тигән Аҡъял батыр* (Әкиәттән). *[Күсәк батыр:] Рәхмәт Ҡарагөләмбәтте әйткәненә, ҡарауыллап ошо ерҙә ятҡаныңа.* «Бабсаҡ менән Күсәк».

**ҠАРАУЫЛСЫ** *и.* Һаҡлау, ҡарауыллау өсөн ҡуйылған кеше. *Төнгө ҡарауылсы. Урман ҡарауылсыһы.* ■ *Баҡса өйөнән ҡарауылсы ҡарт сыҡты.* Ә. Вәли.

**ҠАРАҺАН** [1] *и. һөйл.* Шешекләп, ҡара ҡутыр булып, бик тиҙ үлтерә торған йоғошло ҡаты ауырыу (күберәк малда була, малдан кешегә йоға).

**ҠАРАҺАН** [2] *и. диал.* Селек.

**ҠАРАҺЫУ** [1] *и. һөйл.* Күҙ алмаһы эсендәге баҫымдың бик көсәйеүе арҡаһында барлыҡҡа килеп, һуҡырлыҡҡа килтерә торған ауырыу; глаукома.

**ҠАРАҺЫУ** [2] *с.* Ҡара төҫкә тартым. *Ҡараһыу зәңгәр. Ҡараһыу күк.*

**ҠАРАШ** *и.* **1.** Күҙҙең кем йәки нәмәгәлер, ҡайҙалыр йүнәлтелеше. *Күҙ ҡарашы. Ҡараштьт ситкә алыу.* / Уйҙың, хис-тойғоноң күҙҙәге сағылышы, ҡарау рәүеше. *Асыулы ҡараш. Һынаулы ҡараш. Уйсан ҡараш. Ғәмһеҙ ҡараш.* ■ *Унда төндәр һинең күҙең төҫлө, һинең күҙең ҡара төн төҫлө. Ҡараш тыныс, тәрән, мәғәнәле, әйтерһең дә, киске күл төҫлө.* Х. Ҡунаҡбай. *Һөйәһең дә төҫлө, һөймәйһең дә, әллә нисек һинең ҡарашың. Ошо ҡараш мине артыҡ борсой һәм телгеләй йөрәк яраһын.* М. Хәй. **Ҡараш ташлау** ҡапыл ҡарап алыу, күҙ һалыу.

**2.** Берәй нәмәгә ҡарата булған мөнәсәбәт. *Хужалыҡсан ҡараш. Эшкә һүлпән ҡараш.* ■ *Тәүҙә уны [Таңатарҙы] сит кеше тип ҡарағандар. Егеттең уңғанлығы, батырлығы, барымта ваҡытында ҡаза күргәндәргә күрһәткән ярҙамы был ҡарашты үҙгәрткән.* Ә. Вахитов.

**3.** Айырым бер нәмәгә ҡарата булған уй, фекер. *Донъяға ҡараш.* ■ *Хафиз ҡарт һуғыш тураһында үҙенең ҡарашын белдерҙе.* М. Тажи. /Тормош, тәбиғәт һәм йәмғиәт тураһындағы дөйөм фекер. *Марксистик ҡараш. Атеистик ҡараш. Материалистик ҡараш.* ■ *Тәфтиләү йырында тормошҡа ҡарата оптимистик ҡараш үткәрелә.* Ә. Харисов.

**ҠАРАШЛЫ** *с.* **1.** Күңел торошон сағылдырған. *Ҡыйыу ҡарашлы. Сағыу ҡарашлы. Уҫал ҡарашлы.*

**2.** Ниндәйҙер ҡараштa, фекерҙә торған. *Прогрессив ҡарашлы. Алдынғы ҡарашлы.*

**ҠАРАШЫУ** *ҡ.* **1.** Бер-береңә ҡарау. *Үҙ-ара ҡарашып алыу.*

**2.** *ярҙамл. ҡар.* **ҡарау** 5. *Бала ҡарашыу.*

**ҠАРБАҘ** *и. диал.* Ҡар баҙы (*ҡар.* **баҙ** 1).

**ҠАРБУЗ** [*фарс.*] *и.* **1.** Ҡабаҡтар ғаиләһенә ҡараған ҡаты ҡабыҡлы, ҡыҙыл итле эре йәшелсә бирә торған баҡса үҫемлеге. *Ҡарбуз баҡсаһы. Ҡарбуз баҫыуы.*

**2.** Шул үҫемлектең эре йәшелсәһе. *Мал ҡарбузы. Ҡарбуз балы. Ҡарбуз телеү.*

● *Ике ҡарбуз бер ҡултыҡ аҫтына һыймай.* Әйтем.

**ҠАРБУЗ-ҠАУЫН** *и. йыйн.* Ҡарбуз һәм ҡауындар: ҡауын-ҡарбуз. *[Закир:] Беҙҙең яҡтар ҡалаға килһә, ҡарбуз-ҡауын ашар өсөн иң элек йәшел баҙарға .. бара торған.* З. Биишева.

**ҠАРҒА** *и.*, **ҡара ҡарға** Ҡоҙғондар ғаиләһенә ҡараған йылтыр сөм ҡара төҫтәге ҡош. *Яҙ көнө ырҙын өҫтөндә йәки ер һөргән саҡта, .. балалар, һеҙ күрерһегеҙ ҡарға исемле ҡошто. Һабан аҫты ҡәҫтәренән ҡорттар, селәүҙәр йыя.* С. Кулибай. **Ала ҡарға** килеш-килбәте, ҙурлығы ҡара ҡарға һымаҡ, төҫө ала ҡош. *Ямғыр барын һиҙеп, ала ҡарға һуҙып ҡарҡылдарға кереште.* Ҡ. Даян.

♦ **Күк ҡарға** сәүкә ҙурлығындағы сыбар ҡауырһынлы күсеп китә торған ҡош. **Ҡарға бураны** *диал.* аҡман-тоҡман. *[Әсә:] Бик яман ҡотора шул. Ҡарға бураны етте, ахыры.* Ә. Вәли. **Ҡарға бутҡаһы** *ҡар.* **бутҡа.** **Ҡарға күҙе** ләләләр ғаиләһенә ҡараған, яңғыҙ һабаҡлы, йәшкелт һары сәскәле, һыңар ҡара емешле үлән. **Ҡарға туйы** *диал. ҡар.* **ҡарға бутҡаһы. Телең булмаһа, күҙеңде күптән ҡарға суҡыр ине** әллә ниҙәр эшләрҙәй булып һөйләгән кешегә шаяртып әйтәләр.

● *Ҡарға күҙен ҡарға суҡымай.* Мәҡәл.

**ҠАРҒАЛЫУ** *ҡ. төш. ҡар.* **ҡарғау.** *Серек тормош йөгөн өҫкә йөкмәп, ҡара көнгә ҡалдыҡ ҡарғалып.* Т. Йәнәби.

**ҠАРҒАМОРОН** *и.* Тимерҙе ҡыҫып тотоуға йәтешләп, осо ялпаҡ, эс яҡтан һырлы итеп эшләнгән ҡыҫҡыс рәүешендәге ҡорал.

**ҠАРҒАНЫУ** *ҡ.* Үҙ алдыңа һөйләнеп ҡарғау. *«Ана шул кәһәр һуҡҡыры Ҡунай этлеге был!» — тип бай ҡарғана* (Әкиәттән).

**ҠАРҒАТЫУ** *ҡ. йөкм. ҡар.* **ҡарғау.**

**ҠАРҒАУ** *ҡ.* Яман теләк теләп әрләү. *[Үмәр:] Утҡа һалды бит йөҙө ҡара, биткә ҡара яҡты бит суҡҡа бала. Ике донъяла изгелек күрмәгер, аҙғын ҡыҙ! [Тимергәлә:] Ҡуй, ҡорҙаш, ҡуй. Әйтмәгәнең булһын! Ул ни .эш: күҙ йәше түгеп, үҙ балаңды ҡарғайһың!* Һ. Дәүләтшина. **Алла ҡарғаған** әрләгәндә әйтелә.

**ҠАРҒАШЫУ** *ҡ. һөйл.* Ҡарғау һүҙҙәре әйтеү, күп итеп ҡарғау.

**ҠАРҒЫ** *и.* Эттең муйынына таға торған ҡайыш.

**ҠАРҒЫС** *и. диал. ҡар.* **ҡарлау** 1.

**ҠАРҒЫУ** *ҡ.* Ҡапыл үргә һикереү, һикереп алға ынтылыу. *Кире килде сысҡаны, белмәй бесәй боҫҡанын. Һиҙмәй ҡалды, ҡапыл ҡарғып, боҫҡан бесәй тотҡанын.* Х. Ғәбитов. / Берәй нәмәнән аша һикереү. *Тәрән-тәрән һыуҙарҙы һикереп үткән егетем, ҡарағай ҡара урманды ҡарғып үткән егетем,.. тыңла Урал ни тиер.* Р. Ниғмәти. **Үрә ҡарғыу** арт аяҡтарға баҫып үрә тороу (мал, йәнлеккә ҡарата).

**ҠАРҒЫШ** *и.* Яман теләк теләп, ҡарғап әйтелгән һүҙ; кәһәр. *Ҡара ҡарғыш.* ■ *Таш ҡаяға соҡоп яҙҙым ҡарғыш, уландарым уҡыр бер саҡта* (Халыҡ йырынан). **Ҡарғыш алыу** кемдер тарафынан ҡарғалыу, ҡарғап әйтелгән һүҙҙәр ишетеү. **Ҡарғыш төшөү** ҡарғап әйтелгән һүҙ тормошҡа ашыу, ҡарғышта әйтелгән теләккә дусар булыу. *Ай раббым, күрәһе көндәрем бар икән,— тип Ҡунаҡҡолдоң ҡатыны үкһеп илай башланы.— Кәһәр һуҡһын ул өйҙө! Ҡара ҡар-*

*ғышым төшһөн, Ҡунаккол, һиңә! Ләғнәт!* Х. Ғиләжев.

◆ **Ҡара ҡарғышың ҡара башыңа (төшһөн)** берәү ҡарғағанда, шуға яуап итеп әйтелә. **Ҡарғышлы ҡол** бер рәхәтлек күрмәгән, донъяһы гел кире килеп торған кеше.

● *Эт каргышы бүрегә төшмәҫ.* Әйтем.

**ҠАР-ҠАР** *окш.* **1.** Ҡарға тауышын белдергән һүҙ. *Ҡар-кар итеү. Ҡар-кар кыскырыу.* ■ *Ҡар-кар илай балалар, бәләкәй генә каргалар. Бутка һорап сыулашып, канаттарын кагалар.* Ғ. Амантай.

**2.** Кеше йүткергән тауышты белдергән һүҙ; ҡаж-ҡаж. *Ҡарауылсы карт .. сепрәк еҫе сыгарып тәмәке тарта, үҙе кар-кар йүткерә.* С. Агиш.

**ҠАРҠ-ҠАРҠ** *окш.* Өҙөк-өҙөк ҡарға тауышын белдергән һүҙ. *Ҡарк-карк итеү. Ҡарк-карк кыскырыу.* ■ *Уның [агастың] башына бер карга кунган да, тамагына таш торгандай, карк-карк кыскыра.* В. Хәсән.

**ҠАРҠЫЛДАҠ** *с.* **1.** Өҙлөкһөҙ ҡарҡ-ҡарҡ итеп ҡысҡырыусан (мәҫ. ҡарғаға ҡарата).

**2.** *кусм.* Гел бер һүҙҙе туҡып, маҙаға тейеүсән (кешегә ҡарата).

**ҠАРҠЫЛДАУ** *к.* **1.** Ҡарҡ-ҡарҡ итеү. *Ҡаркылдап кыскырыу. Ҡаркылдыгы сыгыу.* ■ *Ямгыр булырын һиҙеп, ала карга һуҙып каркылдарга кереште.* Ҡ. Даян.

**2.** *кусм.* Бер үк һүҙҙе ҡабат-ҡабат туҡыу. *Һине берәү ҙә көслап алып китмәне, үҙең киттең. Шулай булгас, бында кешеләрҙе сыуалтма. Әле ике көн дә хеҙмәт иткәнең юк, туктауһыҙ каркылдайһың.* Б. Хәсән. *Ҡарга каркылдаһа, ямгыр килә.* Һынамыш.

**ҠАРҠЫЛДАШЫУ** *к. урт. кар.* **ҡарҡылдау** 1. *Ҡаргалар каркылдаша.*

**ҠАРЛАНЫУ** *к.* **1.** Ҡарға борһаланыу, ҡарға батыу. *Ҡарга аунап өҫтө карланып бөткән.*

**2.** Ҡар менән ҡапланыу. *Холодильниктың эсе тотош карланып ултыра.*

**ҠАРЛАУ** *и.* **1.** Ер һөргәндә төрәнде тупраҡтан таҙартыу өсөн ҡулланылған ялпаҡ тимер башлы ҡырғыс. *Мин ер башында төрәнгә йәбешкән дымлы тупракты карлау менән таҙарттым да аттарҙы тагы .. бураҙнага төшөрҙөм.* Ә. Вәли.

**2.** *диал.* Мәләү.

**ҠАРЛУҒАС** *и.* **1.** (*йәки* **ҡара ҡарлуғас**) Ҡыйғас ҡара ҡанатлы, аса ҡойроҡло, бик етеҙ оса торған ҡош. *Ҡарлугас ояһы.* ■ *Ҡарлугаскай кара, муйыны ала, һауаларга осһа, югала* (Халыҡ йырынан). **Таш (***йәки* **кала) ҡарлуғасы** таш ҡая һәм бейек таш йорттар егенә оялай торған оҙон тар ҡанатлы, ҡыҫҡараҡ ҡойроҡло, һорғолт түҫтәге, кәүҙәһенең аҫ яғы аҡ ҡарлуғас. **Яр ҡарлуғасы** ярҙы өңөп оялай торған ҡойроҡ-ҡанаты ҡыҫҡараҡ, түҫкә көңгөртөрәк ҡарлуғас.

**2.** *эйл. ф.* **ҡарлуғасым** Ҡатын-ҡыҙға яратып әйтелә. *Ҡара кашым, карлугасым, капканан карап үтә* (Халыҡ йырынан).

**3.** (*баш хәреф менән*) Ҡатын-ҡыҙ исеме.

◆ **Ҡарлуғас ҡанаты кеүек** ҡыйылып торған ҡара ҡашҡа әйтелә.

**ҠАРЛЫҒАН** *и. диал.* **1.** Эт муйылы (*кар.* **муйыл**).

**2.** *кар.* **ҡарағат.**

**ҠАРЛЫҒЫУ** *к.* **1.** Ғыжылдауыҡҡа әйләнеү (тауышҡа ҡарата). *Тамагы карлыккан. Ҡарлыккансы һөйләү.* ■ *Идрис карт .. балалайкаһын заңгылдатып, карлыккан тауыш менән йырлай.* З. Биишева. *Ҡошо һайрай-һайрай карлыгып, оса-оса талсыгып бөткән, Алпамыша уянмаган.* «Алпамыша».

**2.** Үтә күп булыуҙан тамаҡҡа тығылыу, тамаҡтан үтмәй төйөлөү (аҙыҡҡа ҡарата). *Олатайҙар шунда бил бөксәйткән, тирен түккән күкрәк емереп, байҙы түйындарган карлыккансы, тик үҙҙәре аска тилмергән.* Б. Бикбай.

**ҠАРЛЫҠТЫРЫУ** *к.* Ғыжылдауыҡҡа әйләндереү (тауышты). *Һелтәп [Вәли] .. таягын һеңләһенә екерә. Шулай кыскырып тамагын карлыктырып бөтөрә.* Ғ. Әмири.

**ҠАРЛЫ-ЯМҒЫРЛЫ** *с.* Ҡар ҡатыш ямғырлы. *Ноябрҙең карлы-ямгырлы кисе ине.* Б. Бикбай.

**ҠАРМАҠ** *и.* Ем ҡуйып балыҡ тота торған ҡорал. *Алабуга кармагы. Суртан кармагы. Бәрҙе кармагы. Ҡармак ебе. Ҡармак сыбыгы. Ҡармак ыргагы. Ҡармак һалыу. Ҡармакка кабыу.* ■ *Богаҙаккай күлгә кармак һалдым, кармагыма сабак капманы* (Халыҡ йырынан).

◆ **Сата ҡармаҡ йәбешеү** *диал.* сат йәбешеү (*кар.* **сат** [2]). *[Сәлимә:] Ул Далай-лама Күгебайга сата кармак йәбеште. Миндә бер бүлмә бар, торорһогоҙ, ти.* А. Карнай.

**ҠАРМАҠЛАУ** *к.* **1.** Ҡармаҡ менән тотоу. *Балык кармаклау. Бәрҙе кармаклап алыу.*

**2.** *кусм. һөйл.* Ҡулға төшөрөргә, эләктерергә тырышыу. *Аттың якшыһын кармаклау.*

**ҠАРМАҠСЫ** *и.* Ҡармаҡ менән балыҡ тотоусы.

**ҠАРМАҠСЫЛАУ** *к.* Ҡармаҡлап балыҡ тотоу менән шөғөлләнеү.

**ҠАРМАЛАНЫУ** *к.* Ян-яҡты ҡармау; һәрмәү, ҡапшап ҡарау. *Йоклап киткән һаксы уяна ла кармаланып эҙләй һөңгөһөн.* Б. Вәлит. / Ҡараңғыла һәрмәнеү. *Ҡармаланып, һәрмәләнеп кенә атланык.* Б. Ишемғол.

**ҠАРМАЛАУ** *к.* Һәрмәнеү, һәрмәп эләктерергә, тоторға тырышыу. *Мин аяк аҫтын кармалай башланым, кармалай торгас, бер күҫәк табып алдым* (Әкиәттән).

**ҠАРМАНАЙ** *и. диал.* Ҡулъяулыҡ.

**ҠАРМАНЫУ** *к.* Эҙләнеп, тирә-яҡты һәрмәү, ҡапшау. *Юл ситендә ике бүре ята ине. Өмәттең тәндәре эҫеле-һыуыклы булып китте. Арлы-бирле карманып, санаһынан бер нәмә лә таба алманы.* Д. Юлтый. *Күрһәң ине,— тиҙәр кай берәүҙәр,— агастарҙың япрак ярганын. Көмөш көнөң үтә көндө күрмәй, кара төн эсендә карманып.* Б. Вәлит.

**ҠАРМАУ** *к.* **1.** Ҡул менән тотҡолау, ҡапшау. *Ҡармап карау. Кеҫәне кармау.* ■ *[Мортаза] ике бармагы менән төймәләрен кармап сыга, .. эләктерелгәнме икән, ти.* И. Абдуллин.

**2.** Аймап, матҡып эләктереү. *Ҡармап тотоу.* ■ *[Айыу] ауыҙын ҙур асып, аягымды кармап алырга самалай.* Н. Мусин. / *кусм.* Ҡулға төшөрөү, эләктереү. *Атлылар уларҙы ике флангынан уратып алдарына төшмәксе булды. Ләкин кармарга дошман бронепоезының пулеметтары ирек бирмәй.* Ф. Иҫәнғолов.

● *Ятҡа ялынғансы, ят та яныңды ҡарма.* Мәҡәл.

**ҠАРМАУЫС** *и.* Вөжәк кеүек төрлө йән эйәләренең һәрмәп тота торған ағзаһы; һәрмәүес (*мәҫ.* бал ҡорттарының).

**ҠАРМЫШ**[1] *и.* Ҡәлғәне уратып, бер-береһенә төкәтеп ултыртылған осло бағаналарҙан торған ҡойма. *Ҡаланың уратаһы баштарын ослап ултыртылған имән бүрәнә — ҡармыш менән бейек итеп ҡоймаланған.* Ғ. Ибраһимов.

**ҠАРМЫШ**[2] *и.* Юрматыға ингән башҡорт ырыуының исеме.

**ҠАРПАЙТЫУ** *ҡ.*, **ҡолаҡ ҡарпайтыу 1.** Ҡолаҡты торғоҙоу, үрә тотоу (хайуан, йәнлектәргә ҡарата). *Тейен .. ҡолаҡтарын ҡарпайтып, ботаҡҡа һуҙылып ятты.* М. Тажи. Һайғайып ҡолаҡты үрә торғоҙоу. ■ *Аҡтүш һис ваҡыт керпеген йоммай, ҡолаҡ ҡарпайтып, нимәлер тыңлай.* А. Игебаев.

**2.** *күсм.* нимәгәлер иғтибар итеү, һағайып тыңлау. *Үҙ-ара һөйләшкән тауыш ишетелде. .. Ҡолаҡты ҡарпайтып шымып ҡалдым.* Р. Низамов. *Ҡолаҡты ҡарпайттым. Тик нисек кенә .. тыңларға итһәм дә уның һүҙе ҡолаҡҡа кермәй ине.* Т. Килмөхәмәтов.

**ҠАРПАЙЫУ** *ҡ.*, **ҡолаҡ ҡарпайыу 1.** Артҡа ятмай, ҡалҡып, тырпайып тороу (ҡолаҡҡа ҡарата). *Мин уның ҡыҙыл елкәһен, уң ҡолағының йәлпәшеп, һул ҡолағының ҡарпайып торғанын ғына күреп ҡалдым.* / Тауышҡа һағайып, үрә тороу (йәнлек-хайуандың ҡолағына ҡарата). *Ральф ҡапыл һағайҙы .. Рәми уның ҡарпайған ҡолаҡтарын күрҙе.— Иптәш Горн, эт тынысһыҙлана!* Х. Мохтар.

**2.** *күсм.* Нимәгәлер иғтибар итеп, һағайыу (кешегә ҡарата). *Ҡыҙыҡһыныуҙан Шаһғәлиҙең дә ҡолаҡтары ҡарпайҙы.* Ш. Янбаев. *«Теге килә!» — тигән һүҙҙе ишеткәс, доньяларын онотоп уйнап йөрөгән малайҙарҙың да ҡолағы ҡарпайҙы.* В. Нафиков.

**ҠАРПАН** *с. диал. ҡар.* **ҡарпыш 1.**

**ҠАРПАУ** *ҡ. диал.* Эре-эре итеп турау (итте).

**ҠАРП-ҠОРП** *оҡш.* Ҙур аяҡ кейемен һөйрәп атлағанда, ҡаты ҡыптыр тирегә һуҡҡанда сыҡҡан тауышты белдерә. *Ҡарп-ҡорп итеү. Ҡуңалтаҡ итекте ҡарп-ҡорп һөйрәү. Ҡарындыҡ тәҙрә ишек асҡанға ҡарп-ҡорп килә.*

**ҠАРПЫҠ** *с. диал.* Ҡарпыш.

**ҠАРПЫТҠЫС** *и.* Ваҡ балыҡ ҡатып, эре балыҡҡа һалған ҡармаҡ. *Ҡарпытҡыс ҡуйыу.*

**ҠАРПЫУ** *ҡ.* **1.** Һикереп һыу өҫтөнә сығыу; һикереп һыу өҫтөндәге емде алыу (балыҡҡа ҡарата). *Һыу өҫтөндәге энәгараҡты .. бер ажау ҡарпып китә.* И. Ғиззәтуллин. *Ара-тирә балыҡ ҡарпып ҡуя. .. Тигеҙ һыу өҫтө бер аҙға ғына боҙола.* Ә. Вәли. *Ҡарпып-ҡарпып уйнай балыҡ .. Нөгөштә.* Р. Бикбаев.

**2.** *күсм.* Һәр мөмкин нәмәне ҡомһоҙланып тиҙ генә эләктереү; үҙләштереү. *Ниндәй генә төшөм булмаһын, уны ҡарпып, .. ҡупайырға яратыусылар [бар].* Т. Хәйбуллин. *Ит яҡшылыҡ,— тибеҙ. Әй ҙә, бәндә уны теләгәнсе ҡарпыһын!.. Ләкин бик йыш онотабыҙ ҡалған яртыһын.., файҙағамы, зарарғамы китә [был]?* Ш. Бикҡол.

**ҠАРПЫШ** *с.* **1.** Артҡа ятмай, тырпайып торған (ҡолаҡҡа ҡарата). *[Фажиға:] Саҡ иҫемә төштө. Һин теге бер ҡолағы ҡарпыш Бүкәншиндө әйтәһең икән дә. Килһен әйҙә, килһен.* С. Кулибай.

**2.** (*йәки* **ҡарпыш ҡолаҡ**) Кешене шаяртҡанда йәки мыҫҡыллағанда әйтелә. *[Ғариф ағай — Тимергә:] Әһә, килдеңме, ҡарпыш?* В. Бикбай.

◆ **Ҡарпыш ҡолаҡ, ҡарама тояҡ** бала-сағаның үсекләшә торған һүҙе.

**ҠАРСЫҒА** *и.* Ҡыҫҡа ҡанатлы, кәкре суҡышлы, үткер оҙон тырнаҡлы, уртаса ҙурлыҡтағы йыртҡыс ҡош (ағас башына оялай). *Аҡ ҡарсыға. Күк ҡарсыға. Ҡор ҡарсығаһы. Бүҙәнә ҡарсығаһы. Ҡарсыға өйрәтеү. Ҡарсыға сөйөү.* ■ *Һис кәм түгел ыласындан таһыллы ҡош — ҡарсыға. .. Ҡоштар, йәнлектәр тота, .. бик бейек күккә оса.* С. Кулибай. *Яр ташына ҡунып ялдар иткән ҡор ауынан ҡайтҡан ҡарсыға.* Р. Ниғмәти. *Аҡ ҡарсыға менән күк ҡарсыға шыҡыйып та осоп талсыға* (Халыҡ йырынан).

● *Сөймәгә бирһәң ҡарсыға бир, ҡанъяғаңды буш итмәҫ.* Әйтем.

**ҠАРСЫҠ** *и. диал.* Әбей.

◆ **Убырлы ҡарсыҡ** *ҡар.* **мәскәй 1.**

**ҠАРТ I** *с.* **1.** Оҙаҡ йәшәгән, йәшкә оло; *киреһе* йәш. *Ҡарт кеше. Ҡарт сырайлы. Ҡарт бүре. Ҡарт ағас.* ■ *Был кеше, тауышына ҡарағанда, бик ҡарт ине.* С. Агиш. *Ул ҡарт инде, ауыр ғазап, михнәт менән тулған үткәне.* Ғ. Сәләм. / Оло йәштәге кешегә хас булған; хәлһеҙ, ҡарыуһыҙ. *Ҡарт йөрәк. Ҡарт һөйәк.* ■ *[Тимергәленең] ҡарт күҙҙәре ысын һағыш менән мөлдөрәй.* Ғ. Дәүләтшин.

**2.** *һөйл.* Никахы менән оло. *Йәш кәләшен һөйгән була Сонайым, ҡарт кәләшен һуҡҡан була Сонайым* (Халыҡ йырынан).

**3.** Эше, тәжрибәһе менән оло; тәжрибәле, күптәнге. *[Нина:] Эштәр элекке кеүек үк бөткөһөҙ күп, ауыр. Ярай әле ҡарт большевик Михаил Петрович Ярцев ныҡ ярҙам итә, бирешмәйем.* Б. Бикбай.

**4.** Бик әүәлдән килгән; боронғо. *Ҡарт тарихтың серегән йомғаҡтарын һүтер өсөн ҡыҙыл көрәшселәр .. еңеү йырын йырлап уҙалар.* Ғ. Хәйри.

**5.** Күптәнге, элекке. *[Хафиз:] Мин ҡарт һалдатмын, граждандар һуғышында ла ҡатнаштым.* М. Тажи.

**II** *и.* **1.** Оло йәштәге ир кеше. *Аҡ һаҡаллы ҡарт. Сал ҡарт.* ■ *Һай ҡарттарбыҙ, ҡарттарбыҙ, ни күрмәгән ҡарттарбыҙ, ҡартлас Урал ни күрһә, барын күргән ҡарттарбыҙ.* Ғ. Сәләм. / Оло йәштәге ир кешенең исеменә ҡушып әйтелә. *Ишкилде ҡарт — ҡарттың шундайы: кәрәк саҡта көлдө, уйнаны, мин ҡартайҙым инде, тимәне.* С. Кулибай. / *күпл.* Оло йәштәге ирҙәргә өндәшкәндә әйтелә. *[Ҡотлояр:] Инде, ҡарттар, һүҙ көрәштереп эш сығара торған ваҡыт түгел. Бына хәҙер эште үҙебеҙсә йәйларға кәрәк.* Һ. Дәүләтшина.

**2.** *күпл.* Оло йәшкә етеп аҡыл, тәжрибәләре менән хөрмәт ҡаҙанған ирҙәр. *Ауыл ҡарттары.* ■ *Ил ҡарттары ни тиҙәр? Яныл йәшә һин, тиҙәр.* А. Игебаев. *«Һаулығың — байлығың», тигән боронғо ҡарттар.* Ғ. Дәүләтшин.

**3.** Оло йәштәге ҡатындың йәмағәте; бабай. *Хәсби апай .. ҡартының туҡмала башлағанын*

*күргәс, сыҙап тора алманы.* Т. Йәнәби. / Оло йәштәге ҡатындың үҙ йәмғәтенә өндәшеү һүҙе; бабай. *«Әллә һаулығың юҡмы, ҡарт»,— тине Мәғфиә.* В. Бикбай.

♦ **Аҡ һаҡаллы ҡарт булыу** аҡыллы булыу (алдағы эшкә кәңәш биргәндә йәки үткән эшкә үкенес, шелтә белдергәндә әйтелә). *[Шакир:] Башта уҡ колхоз булһам, аҡ һаҡаллы ҡарт булыр инем, дурак булдым.* Һ. Дәүләтшина. **Ағайың ҡарт** шаяртып, үҙеңде ҙур күрһәтергә иткәндә әйтелә. **Ҡарт албаҫты** әрләгәндә, яманлағанда әйтелә. *[Шәүәли:] Ана бит ҡарт албаҫты ниндәй ҡот осҡос нәмәләр һөйләй.* Б. Бикбай. **Ҡарт атай** *диал.* олатай. **Ҡарт башы менән** оло кешене берәй килешмәгән эше өсөн шелтәләгәндә әйтелә. *[Мулла:] Ҡуй, ҡуй, Үмәр ҡоҙа, ҡарт башың менән көфөр һөйләмә, шайтан ҡотҡоһона төшмә.* Һ. Дәүләтшина. **Ҡартая белмәгән ҡарт ишәк** *ҡар.* **ҡартайыу. Ҡарт бүре** *ҡар.* **бүре. Ҡарт иҫәр** әрләгәндә, шелтәләгәндә әйтелә. **Ҡарт көндә** оло йәшкә еткән саҡта, ҡартлыҡта; ҡартайған көндә. *Борон булған, ти, бер бабай менән бер әбей. Ҡарт көндәрендә булған, ти, уларҙың бер улдары* (Әкиәттән). **Ҡарт ҡыҙ** *шул уҡ* **ултырған ҡыҙ** (*ҡар.* **ҡыҙ). Ҡарт төлкө** *ҡар.* **төлкө** 3. **Ҡарт әсәй** *диал.* өләсәй.

● *Йәштәр килһә — эш башлай, ҡарттар килһә — һүҙ башлай.* Әйтем. *Ҡарт кешенең ни байлығы — таяғы ла тамағы.* Әйтем. *Ҡарт ҡуйынында ҡалас бар — ҡаласынан ҡан тамыр, йәш ҡуйынында ҡамсы бар — ҡамсыһынан бал тамыр.* Мәҡәл. *Ҡарттар һүҙен ҡапҡа йый.* Мәҡәл.

**ҠАРТА** *и.* Йылҡы малының туҡ эсәге.— *Еңгәнә лә әйттем әле, бик һәйбәт итеп аш һалып, майлы ҡарталар бешереп, Зарифты ашҡа алайыҡ әле, тинем.* Ғ. Ғүмәр. **Ҡырҡ ҡарта** *диал. ҡар.* **ҡатлансыҡ** [2].

● *Иттең тәмлеһе ҡарта, ашаған һайын арта.* Әйтем.

**ҠАРТАЙТЫУ** *ҡ.* **1.** Олоға, ҡартҡа әйләндереү; ҡарт итеү, олоғайтыу. *Ҡайғы ҡартайтты.* ■ *Транспорт ҡартайта, транспорт аяҡтан йыға,— тине Ғәбделхәкимов.— Элеватор алыҫ, ҡырҡ километр.* Я. Вәлиев. *Ҡыҙ балаҡай китһә, һис ҡайта алмай, ят ерҙәрҙә башын ҡартайта* (Халыҡ йырынан).

**2.** *эйһ. ф. ҡар.* **ҡартайыу.** *Ҡартайтты, ҡарыу бөттө.* ■ *Ҡарлы тауҙай ап-аҡ булған башың, әллә микән иртә ҡартайта?* Н. Нәжми.

● *Яман ат, яман ҡатын — ирҙе шулар ҡартайтыр.* Әйтем.

**ҠАРТАЙЫЛЫУ** *ҡ. эйһ. ф. ҡар.* **ҡартайыу.** *Иртә ҡартайылды. Көс юҡ, ҡартайылды ахырыһы.* ■ *[Көрәшсе Харис:] Быға са мин бөкмәгән бил булманы, күрәһең, ҡартайыла,— тине лә, ҡул һелтәп, урынына ултырҙы.* И. Ғиззәтуллин.

**ҠАРТАЙЫУ** *ҡ.* Оло йәшкә етеү, ҡартҡа әйләнеү; олоғайыу. *Ҡартая төшөү. Күҙгә күренеп ҡартайыу.* ■ *Ҡарауыҙ ҡартайып китте булһа кәрәк: ишетмәй, еҫ белмәй, әҙҙән яҙлыға башланы.* С. Кулибай. *Ҡартайыуҙың сигенә етеп, күҙенән яҙып ҡалған Йәнмырҙа бер көн кис, балаларын сыуал янына йыйған* (Әкиәттән). / Оло йәштәге кешегә хас рәүештә хәлһеҙ, ҡарыуһыҙға әйләнеү. *Һыуһылыу әбейҙең .. ҡыуаныс йәштәре ҡартайып барған күҙҙәренән көслө ағым булып аҡты.* Ғ. Дәүләтшин. *Үмәр ҡарт күҙенә эркелгән йәшен ҡартайып ҡатҡан бармаҡтары менән һөртөп ҡуйҙы.* Һ. Дәүләтшина.

♦ **Ҡартайғансы аҡыл инмәгән** (*йәки* **ултырмаған**) оло кешенең берәй ҡылығын хуп күрмәй, шелтәләгәндә әйтелә. *[Котлояр:] Ҡартайғансы һиңә лә аҡыл ултырманы, «Рәхимә еңгәм, Ныязгол ҡайнағам» тип, ауыҙ һыуың ҡорой.* Һ. Дәүләтшина. **Ҡартая белмәгән ҡарт ишәк** үҙен тотоуҙа, ҡыланышында үҙ йәшенә хас олпатлыҡ булмағанда әйтелә. **Ҡартая белмәү** ҡартлыҡты тоймау, ҡылыҡта, эштә ҡарт икәнде һиҙмәү. *«Бер ҙә ҡартая белмәйһең, Ғариф ағай»,— тине Ғәләү, уның һыҙланмай-нитмәй етеҙ йөрөгәненә һоҡланып.* Б. Бикбай. **Тыумаҫ борон ҡартайған** дәртһеҙ йәштәргә ҡарата әйтелә.

**ҠАРТАЙЫШЫУ** *ҡ. урт. ҡар.* **ҡартайыу.** *Барыһына ла оло төҫ инеп, ҡартайышып киткәндәр.*

**ҠАРТАТАЙ** *и. диал.* Атайҙың атаһы; олатай.

**ҠАРТИНӘЙ** *и. диал.* Әсәйҙең әсәһе; өләсәй.

**ҠАРТ-ҠАМҠЫ** *и. йыйн.* Йәшкә оло ҡарт кешеләр, бабай һәм әбейҙәр. *Халыҡ шау-гөр килде. Ҡарт-ҡамҡы, бала-саға — бөтәһе лә ҡалмай аяҡҡа баҫты.* Ш. Шәһәр.

**ҠАРТ-ҠАНҠЫ** *и. диал.* Ҡарт-ҡамҡы.

**ҠАРТ-ҠОРО** *и. йыйн. кәмһ.* Бабай һәм әбейҙәр. *Ауылда ҡарт-ҡоро ла .. йәтим-еһер генә күренеп ҡала.* З. Биишева.

**ҠАРТЛАС** *и.* Йәштәргә хасыраҡ ҡылыҡ күрһәткән оло кешегә шаяртып әйтелә. *[Хәлиулла:] Асыуланмағыҙ инде мин ҡартласҡа, үҙем белгәнсә һөйләнем.* С. Агиш.

**ҠАРТЛЫҠ** *и.* **1.** Ғүмерҙең оло йәшкә еткән осоро; *киреһе* йәшлек. *Ҡартлыҡ килеү. Ҡартлыҡ етеү.* ■ *Йәшлек һәр берәүгә килгән кеүек, ҡартлыҡ ситләп үтмәҫ һис кемде.* Х. Кәрим. *Ҡартлыҡтың бәхетлеһе — һаҡал һыйпап көлгәне, быуат-быуат йәш йәшәп, таяҡ тотмай йөрөгәне.* Ғ. Сәләм.

**2.** Оло йәшкә еткән саҡтағы хәл, ҡарт булған хәл. *Ҡартлыҡтан килгән хәлһеҙлек. Ҡартлыҡ баҫыу.* ■ *Ултыр эйәрҙә ҡартлыҡ баҫҡансы, йәки атыңдан ҡолап ятҡансы.* М. Кәрим.

● *Ваҡыт үтә тора, ҡартлыҡ етә тора.* Әйтем. *Йәшлегең тырыш булһа, ҡартлығың тыныс булыр.* Мәҡәл. *Ҡартлыҡ — түгел икән шатлыҡ.* Әйтем.

**ҠАРТМА** *и.* Ҡатын-ҡыҙҙың осло итеп, эсләп тегелгән, ҡашмау һымаҡ ынйы-мәрйен, тәңкә-көмбәҙ менән биҙәлгән боронғо баш кейеме.

**ҠАРТҺЫНЫУ** *ҡ.* Ҡарт тип иҫәпләү, ҡартҡа һанау. *Ҡатынды ҡартһыныу.*

**ҠАРТЫ-ЙӘШЕ** *и. йыйн.* Ҡарт һәм йәштәр, бөтә кеше. *Мөхәббәт — ул, әйтерһең дә утлы йәшен, һанап-һорап тормай һис бер кемдең йәшен, һүнмәҫ ялҡын менән ялмай ҡартын-йәшен.* Р. Низамов. *Ҡолтүбә .. халыҡтан ҡан-йәш түктереп, ҡартын-йәшен теҙ сүктереп, зар илатып хөкөм йөрөтә башлаған* (Әкиәттән).

**ҠАРТӘСӘЙ** *и. диал.* Атайҙың әсәһе; өләсәй.

**ҠАРУН** [*гәр.*] *с.* Үтә ныҡ һаран; ҡомһоҙ. *Ҡарун тип халыҡ белмәй әйтмәгән: кешенән түгел, үҙенән ҡыҙғана.* З. Ғәлимов. *[Олонбикә:] Ҡарун*

*икән был Йыһангир мулла тигәндәре: ни тиклем ер биләй, лавкаһы бар, һатыу итә. .. Ул да етмәгән, кеше балаһын .. оло һандыҡ күтәртеп, ил ҡыҙырырға сығарып ебәргән. Яланаяҡ йөрөтә!* Ғ. Ғүмәр. *Их, яуыз бай, карун, ер йотҡоро!* Ғ. Хәйри.

**ҠАРУНЛАНЫУ** *ҡ.* Һаранлыҡ күрһәтеү; ҡомһоҙланыу. *Бай егеттән малын ҡыҙғанып, ҡарунланып, арҡанды ҡырҡып ебәрә. Егет ҡоҙоҡ төбөнә төшөп китә* (Әкиәттән).

**ҠАРУНЛЫҠ** *и.* Ҡарун кешегә хас сифат; һаранлыҡ.

**ҠАРУТ** *и.* Йөнтәҫ һабаҡлы, ҡара-ҡаршы япраҡлы, тупалсаҡланып торған ваҡ өйкөм сәскәле үлән. *Һауын бейә өсөн ҡылған, һарут, ҡарут үләндәре һис бер үлән менән алмаштырмаҫлыҡ дәрәжәлә файҙалы.* М. Ғөбәйҙуллин.

**ҠАРҺАҠ**[1] *с.* Кәүҙәгә, буйға бәләкәй; тәпәшәк. *Ҡарһаҡ кеше.* ■ *Хан улы үҙе ҡарһаҡ, үҙе аҡһаҡ, көмөрө, етмәһә бик үҫал бер әҙәм икән, ти.* «Ҡуҙыйкүрпәс менән Маянһылыу».

**ҠАРҺАҠ**[2] *и.*, **ҡарһаҡ төлкө 1.** Һары төҫтәге ваҡ дала төлкөһө. *Ҡыя ҡарап, ҡырға юртҡан ҡарһағы бар Балҡан тау.* «Заятүләк менән Һыуһылыу». *Ай-һай ҙа ғына тигән ай тауышҡа ҡарһаҡ төлкө ҡаса ҡамышҡа* (Халыҡ йырынан).

**2.** *с. мәғ.* Шул йәнлектең тиреһенән тегелгән. *Ғәйнекәйҙең кейгән билле туны ҡарһаҡ ҡына түгел, баса икән* (Халыҡ йырынан).

**ҠАРҺАЛАНДЫРЫУ** *ҡ.* Ашыҡтырыу, ҡабаландырыу. *[Яланбикә:] Әсәй, мин әллә ҡасан әҙерләнеп бөткәнмен. .. Кейәүең ни ҡабаландыра ла ҡарһаландыра.* Ғ. Дәүләтшин.

**ҠАРҺАЛАНЫУ** *ҡ.* Ашығыу, ҡабаланыу. *Ҡарһаланып йөрөү.* ■ *Бала илаған тауыш ишетелде. Дуҫтың ҡатыны ҡарһаланып һикереп торҙо.* «Ағиҙел», 1968, № 12. / Ашағанда ҡомһоҙлоҡ күрһәтеү, ашығыу. *Ҡарһаланып ашау.* ■ *Юлсы төргәген асып, үлән өҫтөнә йәйеп һалды. Юлға алып сыҡҡан көликмәкте һындырып, ҡарһаланып ашарға тотонді.* С. Кулибай.

**ҠАРҺАП-ҠАРҺАП: ҡарһап-ҡарһап ашау** *һөйл.* ҡабаланып, һоғаланып ашау.

**ҠАРҺҮҘ** *и.* Халыҡ ижадының сәсмә әҫәре; әкиәт. *Ҡарттар китә, берәм-берәм китә мәңгелеккә беҙҙең аранан. Күпме аҡыл, һөнәр, ҡарһүҙ китә — баштар етмәҫ уйлап ҡараһаң!* Ғ. Дәүләтов.

**ҠАРҺЫЛЫУ** *и.* Яңы йыл байрамында Ҡыш бабай менән бергә йөрөгән ҡыҙ.

**ҠАРШУҒА** *и. диал. ҡар.* **ҡабырсаҡ** 1.

**ҠАРШЫ**[1] *и.* **1.** Ниҙең дә булһа алғы тарафындағы урын. *Көҙгө ҡаршыһы. Ҡаршыға баҫыу. Ҡаршыға ҡуйыу. Ҡаршыға ултырыу. Ҡаршынан үтеү. // Ҡаршы яҡ. // Ҡаршы ултырыу. Ҡаршы ятыу.* ■ *Кемдер берәү автомобиль менән ҡаршыбыҙға килеп туҡтаны.* Ғ. Сәләм. *Янмаҫ ҡына инем, көймәҫ инем, йәнкәй-йәнәш юҡтыр ҡаршымда* (Халыҡ йырынан). *Ҡаршы тауҙан егетте бер ҡыҙ күреп ҡалған* (Әкиәттән).

**2.** Тотҡан йүнәлеш алды, тотҡан йүнәлешкә кире тараф. *Ҡаршыға төшөү. // Ҡаршы хәрәкәт. // Ҡаршы барыу. Ҡаршы килеү. Ҡаршы осрау. Ҡаршы сығып алыу.* ■ *Эй китә был көтөүсе, эй китә, шунан быны ҡаршыһына бер эт килеп сыға* (Әкиәттән). *Аҙнагол үҙ-үҙен онотоп, ажғырып ятҡан тулҡындарға ҡаршы йөҙөп киткән.* З. Биишева.

**3.** *с. мәғ.* Кемгә йәки нимәгәлер ҡарата кире мөнәсәбәтле. *Ҡаршы кеше. Ҡаршы фекер. Ҡаршы булыу. // Ҡаршы һөйләү. Ҡаршы эшләү.* ■ *[Әршит:] Шулай ҙа мин семья ҡороуға ҡаршымын.* Ғ. Сәләм. *Иреңә ҡаршы һүҙ әйтеп, ауыҙың асма, киленсәк* (Туй таҡмағынан). **Ҡаршы төшөү** (*йәки* **килеү**) нимәгәлер кире мөнәсәбәт белдереү, хупламау. *Тимербулат .. донъя күрергә сығып китмәк булған. Ата-әсәһе ҡаршы килмәгән* (Әкиәттән). **Ҡаршы тороу** кемдеңдер эш-маҡсатына, ниҙеңдер тәьҫиренә кире тороу. *Өйҙә ҡыйыҡлап, кеше рәтенә индерәм тиһәң, һин һәр ваҡыт ҡаршы тораһың.* Т. Йәнәби.

**4.** *с. мәғ.* Кем йәки нәмәгәлер ҡарата көрәш алып барған, дошман булған. *Ҡаршы ғәскәр. Ҡаршы яҡ. // Ҡаршы көрәшеү. Ҡаршы өндәү. Ҡаршы эш алып барыу.* ■ *Эске шайтан беҙгә ҙур ярҙамсылыр, бар иман, выжданға ҡаршы ҡамсылыр.* Ш. Бабич. *Атайым серкәйҙәргә ҡаршы һәр ваҡыт кәнәфер майы йөрөтә.* Д. Юлтый.

**5.** *төб. клш. менән бәйл. функцияһында* 1) нәмәнеңдер алғы тарафында булғанлыҡты белдерә. *Ҡояшҡа ҡаршы яҡ. Утҡа ҡаршы урын. Баҡсаға ҡаршы йорт;* 2) нәмәнеңдер хәрәкәтенә кире йүнәлештә булғанды белдерә. *Ағымға ҡаршы йөҙөү. Елгә ҡаршы барыу;* 3) эш-хәрәкәттең нәмәнелер бөтөрөүгә, хәрәкәтен туҡтатыуға, тәьҫирен кәметеүгә йүнәлтелгәнен белдерә. *Һуғышҡа ҡаршы хәрәкәт. Ҡоролоҡҡа ҡаршы көрәш;* 4) нимәнеңдер бер эш-ҡылыҡҡа яуап рәүешендә башҡарылғанын белдерә. *Бүләккә ҡаршы бүләк биреү. Хатҡа ҡаршы хат яҙыу;* 5) эш-хәлдең ниндәйҙер миҙгел йәки ваҡиғанан алда булғанын белдерә. *Байрамға ҡаршы. Кискә ҡаршы. Ялға ҡаршы.* ■ *Таңға ҡаршы ысыҡ төшкән.* Я. Хамматов; 6) әйтелгән фекергә ҡарата һөйләүсенең мөнәсәбәтен белдергән инеш һүҙбәйләнеш яһай. *Бәхетһеҙлеккә ҡаршы. Гонаһшомлоҡҡа ҡаршы. Ғәжәпкә ҡаршы. Ҡыҙғаныска ҡаршы. Ҡыуаныска ҡаршы. Үкенескә ҡаршы.*

**6.** 3-сө зат эйәлек һәм у.-в. клш аффиксы менән бәйләүес функцияһында ҡулланыла (*ҡар.* **ҡаршында**).

◆ **Ҡаршы алыу** 1) килеүсенең алдына, юлына сығыу. *Йорт хужаһы йүгереп сығып ҡапҡаны асты ла, .. Сәлмәнде ололап ҡаршы алды, ти* (Әкиәттән); 2) кемде йәки ниҙелер ҡабул итеү. *Был китапты уҡыусылар ҡуш ҡуллап ҡаршы аласаҡ.* Р. Ниғмәти. **Ҡаршы ҡуйыу** ике араны дошманлаштырыу. **Хәйерсегә ел ҡаршы** эш көтөлмәгән бер ҡаршылыҡҡа, тотҡарлыҡҡа осрағанда әйтелә.

**ҠАРШЫ**[2] *с. диал.* Кәрше.

● *Ҡаршы ағаска ҡаты сөй.* Мәҡәл.

**ҠАРШЫЛАНЫУ** *ҡ. төш. ҡар.* **ҡаршылау.** *Шиңгән сәскә менән ҡаршылана байтаҡ иртәләр.* М. Кәрим.

**ҠАРШЫЛАУ** *ҡ.* **1.** Килеүсенең алдына йәки юлына ҡаршы сығыу. *Ҡунаҡ ҡаршылау. Көтөүҙе ҡаршыларға сығыу.* ■ *Йүгерешеп ҡайтып ингән балаларҙы ҡапҡа төбөндә Хөрмәттең еҙнәһе ҡаршылай.* З. Биишева.

**2.** Кемде йәки ниҙелер ҡабул итеү. *Ҡул сабып ҡаршылау. Йылы ҡаршылау.* ■ *Ҡыҙарып сыҡҡан ҡояшты һайрап ҡаршылай ҡоштарың.* Салауат Юлаев. / Килгән хәл-ваҡиғаны күтәреп алыу. *Яҙҙы ҡаршылау.* ■ *Халыҡ 1 Майҙы яңы уңыштар менән ҡаршылай.* «Совет Башҡортостаны», 1964, 30 апрель.

**ҠАРШЫЛАШ** *с.* Бер-береһенә ҡаршы урынлашҡан. *Ҡаршылаш өйҙәр.* // *Ҡаршылаш ултырыу.*

**ҠАРШЫЛАШЫУ** [1] *ҡ. урт. ҡар.* **ҡаршылау** 1.

**ҠАРШЫЛАШЫУ** [2] *ҡ.* **1.** Берәүҙең ниәтенә, теләгенә кире тороу; ҡаршылыҡ күрһәтеү. *Ҡарт ҡаршылашманы, сыбыртҡыһын алып, атын һуҡты.* Ғ. Дәүләтшин.

**2.** Кеше һүҙенә ҡаршы тороп, һүҙ әйтешеү. *Ҡотлояр байҙың мыжымаған сәгәте юҡ. Тимеркәй уның менән ҡаршылашмай. Ҡаршылашып ҡайҙа бараһың.* Д. Юлтый.

**ҠАРШЫЛЫҠ** *и.* **1.** Кешенең ниәтенә, теләгенә ҡарата булған кире мөнәсәбәт; ризаһыҙлыҡ. *«Мине лә үҙегеҙгә алмаҫһығыҙмы икән?» — тигән Уғатар батыр. «Теләһәң, ҡаршылыҡ юҡ, өсәүҙән дүртәү яҡшы»,— тигән Аҡъял батыр* (Әкиәттән).

**2.** Кешенең ниәтенә, теләгенә йәки йәмғиәттәге берәй хәрәкәткә кире йүнәлтелгән эш; ҡаршы ҡуйылған көс йәки хәрәкәт. *[Дауытов:] Был ҡаршылыҡтарҙы ҡулаҡ ҡалдыҡтары ойоштора.* Б. Бикбай. *Атлылар дошмандың ҡаты ҡаршылығына осраны.* Ә. Ихсан.

**3.** Тормошҡа, эшкә ҡамасау килтергән төрлө тотҡарлыҡ. *Тормош ҡаршылыҡтары. Ҡаршылыҡҡа осрау.* ■ *Ҡаршылыҡтарға барабыҙ ҡаршы, беҙҙә көс, ғәйрәт, беҙҙә шат күңел.* Ғ. Әмири.

**4.** Кешенең фекерендәге, ҡылығындағы йәки эшендәге ярашһыҙлыҡ. *Фекер ҡаршылығы. Һүҙ менән эш араһындағы ҡаршылыҡ.* ■ *Идея--эстетик ҡаршылыҡтар уның [С. Ҡудаштың] был осорҙағы бүтән шиғырҙарында ла күпмелер дәрәжәлә һиҙпелеп үтте.* Ғ. Хөсәйенов.

**5.** *филос.* Тәбиғәт һәм йәмғиәт күренештәренә хас булған үҙ-ара килешмәүсәнлек. *Синфи ҡаршылыҡ. Эске ҡаршылыҡтар.*

**6.** *физ.* Үткәргестең материалына, үлсәмдәренә, температураһына ҡарап үҙгәрә һәм ток үтеүенә тотҡарлыҡ яһай торған дәүмәл. *Аэродинамик ҡаршылыҡ. Өҫтәмә ҡаршылыҡ. Индуктив ҡаршылыҡ. Сағыштырма ҡаршылыҡ.*

♦ **Ҡаршылыҡ күрһәтеү** 1) кешенең ниәтенә, эшенә ризаһыҙлыҡ белдереп ҡаршы тороу. *Ҡыуғынсылар Заятүләкте, бер ҙә ҡаршылыҡ күрһәтмәһә лә, аяҡ-ҡулын бәйләп, атаһы Сәмәр ханға алып ҡайталар.* «Заятүләк менән Һыуһылыу»; 2) килгән яу йәки дошманға ҡаршы сығып көрәшеү. *Берҙән-бер көндө ҡалабыҙға дейеү осоп килеп төштө. Бер ниндәй ҡаршылыҡ күрһәтә алманыҡ* (Әкиәттән).

**ҠАРШЫЛЫҠЛЫ** *с.* **1.** Ҡамасау килтерерҙәй төрлө тотҡарлыҡлы. *Мотоциклсылар ҡаршылыҡлы юлда ярышты.*

**2.** Тап килмәгән, ярашмаған яҡтары булған. *Ҡаршылыҡлы фекер. Ҡаршылыҡлы тойғо кисереү.*

**ҠАРШЫЛЫҠҺЫҘ** *р.* Ҡаршылыҡ күрһәтмәй, риза булып. *Бер ниндәй ҡаршылыҡһыҙ ҡушҡанды үтәү.* ■ *Буранбай һис ҡаршылыҡһыҙ кейенә башланы.* Д. Юлтый.

**ҠАРШЫН** *и.* Боронғо бер башҡорт ырыуының исеме.

**ҠАРШЫНДА** *бәйл. функцияһында* **1.** Кемдең дә булһа алдында, кем дә булһа күреп, ишетеп торғанды белдергәндә ҡулланыла; алдында. *Ололар ҡаршында әйтеү.* ■ *Зөлхәбирә һылыу үкһеп илай хур булдым тип кеше ҡаршында* (Халыҡ йырынан).

**2.** Кемгә йәки нәмәгә булһа ла бәйләнешле эш--хәлде белдереү өсөн ҡулланыла; алдында. *Йәштәр ҡаршында торған бурыстар.* ■ *Ҡулдарың киң шәфҡәтем ҡаршында тетрәп ҡалтырар.* Ш. Бабич.

**ҠАРЪЯУ** *ҡ. иҫк.* Ҡарт булыу, ҡартайыу. *[Иҙеүкәй — Мораҙымға:] Биленә һаҙаҡ ураттым, хан урынына ултырттым. Ҡаръяған да көнөмдә үҙ башыма көс иттем.* «Иҙеүкәй менән Мораҙым».

**ҠАРЫ** [1] *и. иҫк.* Енсек.

**ҠАРЫ** [2] *с. иҫк.* **1.** Боронғо.

**2.** Оло йәшле, йәшкә оло; ҡарт. *Ҡары кеше.*

♦ **Ҡары ҡорт** *ҡар.* **ҡорт** [1].

**ҠАРЫ** [3] [*ғәр.*] *и. иҫк. кит.* Ирле ҡатын.

**ҠАРЫҒЫУ** *ҡ.* Енси мөнәсәбәткә инеү, ҡауышыу (эт, бесәй, бүре һ. б. һөтимәрҙәргә ҡарата). *Ҡарығып йөрөү. Яҙ бүреләр ҡарыға.*

**ҠАРЫЗ** [*ғәр.*] *и. иҫк.* Ссуда. *Ҡарыз алыу. Ҡарыз биреү.*

**ҠАРЫЙ** [1] [*ғәр.*] *и.* Ҡөрьәнде дөрөҫ итеп уҡый белгән йәки яттан уҡыған кеше. *Аҡһаҡ шәкерт теге һуҡыр ҡарыйға хеҙмәт итеп тамаҡ туйҙыра ине.* М. Ғафури.

**ҠАРЫЙ** [2] *с. ҡар.* **ҡары** [2].

**ҠАРЫЛЫУ** *ҡ.* Тамаҡтан үтмәй төйөлөү, тамаҡҡа тороу; ҡарлығыу. *Хажисолтан ауыҙын асты. Кинйәбулат усындағы итте уның ауыҙына тыҡсыны. Хажисолтан ҡарылды.* Я. Хамматов.

● *Һаранға һарылма, балыҡҡа ҡарылма.* Мәҡәл.

**ҠАРЫМТА** *и.* **1.** Эшләнгән эш йәки бирелгән нәмәгә ҡаршы яуап. *Ҡоҙағыйға ҡулдәк кейҙергәйнем, ҡарымтаһына бағшай сапан кейҙереп ҡайтарҙы.* Т. Морат.

**2.** *тар.* Ҡан ҡойоуға ҡаршы ҡан ҡойоп, һөжүмгә ҡаршы һөжүм итеү рәүешендә алынған үс; ҡон. *Ҡарымтаға килеү. Ҡарымтаһын ҡайтарыу.* ■ *[Нәркәс:] Атай, уға ҡаныҡма, уның ҡанын ағыҙма. Уның өсөн бар Урал әҙләр һинән ҡарымта.* С. Мифтахов.

● *Барымтаға — барымта, ҡарымтаға — ҡарымта.* Әйтем.

**ҠАРЫМТАЛАШЫУ** *ҡ.* Үс алышыу, ҡон ҡайтарышыу.

**ҠАРЫМТАЛАУ** *ҡ.* Үс алыу, ҡон ҡайтарыу.

**ҠАРЫН** *и.* **1.** Тереклектәрҙең ашты ҡабул итеп эшкәртә торған эске ағзаһы; ашҡаҙан. **Бәләкәй ҡарын** көйөшлө малдың ашҡаҙанындағы дүртенсе бүлек. **Оло ҡарын** көйөшлө малдың ашҡаҙанындағы беренсе иң ҙур бүлек. **Таҙ ҡарын** көйөшлө малдың ашҡаҙанындағы икенсе бүлек; ҡуҙлансек. / Һуйған малдың эске өлөштә-

ре, эсәк-ҡарын. *[Рәхимә — Мәғфүрәгә:] Бына бөгөн тирә-яҡ күршегә һуғым ашатайыҡ .. тип ҡайнашып ятҡан көн әле. Ҡарын алғанда килендәр етешә алмай ҡырын-ҡыйҡыу булды.* Һ. Дәүләтшина.

**2.** Кәүҙәнең күкрәк аҫтынан сатҡа тиклемге өлөшө; ҡорһаҡ. *Ҡарағөлөмбәт ҡыпсаҡтарҙың еренә бара һалды. Ҡатын, бала, ҡарт-ҡороно аямаҫтан, осрағандың ҡарынын яра һалды.* «Бабсаҡ менән Күсәк».

**3.** *һөйл.* Аналыҡ. *Йәмилә ниндәй дәлил менән Күсәкте ҡарында саҡта үлтермәй алып ҡалғанын .. әбейгә һөйләп бирә..* «Бабсаҡ менән Күсәк».

♦ **Ас ҡарынлай** (*йәки* **ҡарынға**) ашамаған көйө, ас хәлдә. **Ҡарын асыу** ашағы килеү, асығып китеү. *Ҡарын асыуҙы, ашағы килеүҙе һөйләргә түгел. Осраған бер обоздан ашарға һорайбыҙ.* Д. Юлтый. **Таҙ ҡарын кейҙереү** *этн.* туйҙа ҡалын ашау йолаһы (туйҙа егет яғы ҡалын бирерлек булмаһа, егеттең атаһы ҡыҙ өйөнә тере ҡуй алып бара. Ҡалын сәйе эсеү алдынан ҡуйҙы һуйғас, ҡайынйеңгәләр, ҡоҙа-ҡоҙағыйҙар алдында «ҡоҙалар, туй һимеҙ, ҡоҙағыйҙар, туй һимеҙ», тип һөйөнсөләйҙәр. Һуйылған ҡуйҙы бешерергә һалғас, уйын-көлкө башлана, ҡайынһеңлеләр ҡуйҙың йыуылмаған, бысраҡ ҡарынын алып, шаярып, «ҡоҙаға таҡыя кейҙерәбеҙ», тип, һелкетеп алып йөрөйҙәр. Ҡоҙа ҡайынйеңгәләргә аҡса йәки бүләк биреп ҡотола). *Туйҙа ҡоҙаларға йырлайҙар: Бына ҡоҙа аҙаҡ һүҙ, беләбеҙ аҡсаң барын. Бүләк бирмәй тартышһаң, кейҙерәбеҙ таҙ ҡарын.* М. Буранғолов.

● *Һарандың ҡарыны түйыр, күҙе туймаҫ.* Әйтем. *Һурпа эскәндең ҡарыны йыуан, ит ашағандың балтыры йыуан.* Әйтем.

**ҠАРЫНҒАУ** *с. диал.* Ауырлы, ауыр аяҡлы.

**ҠАРЫНДАШ** *и.* **1.** Бер әсә балалары (бер-береһенә ҡарата). *Фәниәнең һөйөнгәнен күрһәгеҙ ине! Ҡарындашы өсөн дә кеше шул кәҙәре шатланмаҫ.* Ф. Иҫәнғолов.

**2.** Ир-аттың үҙенән бәләкәй ҡыҙ туғаны. *Ағаҡайым салғы янығанда талмаймы ни һинең беләкәйең, ҡарындашыңды алып киткәнгә янмаймы ни һинең йөрәкәйең* (Сеңләүҙән). / Ир-аттың үҙенән кесе ҡатын-ҡыҙға өндәшеү һүҙе. *[Сурагол:] Йә, ҡарындаштар, ни эш гөрләтәһегеҙ? Ҡотой, Ҡотдостар ҡайҙа?* Т. Хәйбуллин.

**ҠАРЫНДАШЛЫҠ** *и. диал.* Туғанлыҡ.

**ҠАРЫНДАШ-ЫРЫУ** *и. йыйн. ҡар.* **туған-ырыу.**

**ҠАРЫНДЫҠ** *и.* Һыйыр ҡарынының эске ҡатлауынан һыҙырып, киреп киптереп эшкәртелгән йоҡа яры. *Ҡарындыҡ ашаулыҡ. Ҡарындыҡ тәҙрә.* ■ *Ишек асылыуға тәҙрә ҡарындығы ҡап итеп эскә ҡалтайҙы.* Ф. Иҫәнғолов. *Бикйән ата-әсәһенә .. ҡарындыҡҡа төрөп бер юлаусы артынан ҡустәнәс ебәрҙе* (Әкиәттән).

**ҠАРЫНСЫҠ** *и. мед.* Йөрәктең ҡан йөрөшөн тәьмин иткән өлөшө. *Йөрәк дүрт бүлектән тора, юғарғы икеһе йөрәк алды тип, түбәнге икеһе ҡарынсыҡ тип атала.* З. Заһидуллин.

**ҠАРЫНЪЯУ** *и.* **1.** Малдың ҡарынын ҡаплаған эс майы; ҡарын майы. *Ҡарынъяуын һыҙырып алыу.*

**2.** *анат.* Ҡорһаҡ ҡыуышлығындағы ағзаларҙы ҡаплап торған ҡатлам-ҡатлам май йыйырсыҡтары.

**ҠАРЫПЛАШЫУ** *ҡ. диал.* Әрепләшеү.

**ҠАРЫСҠЫ** *и. иҫк.* Бүре. *[Мөйтән бей] саңҡылдап ҡарысҡылай һөрән һалды, аҡыл менән бейеклектең түрен алды* (Бәйеттән).

**ҠАРЫУ** [1] *ҡ. иҫк.* Ҡартайыу.

**ҠАРЫУ** [2] *и.* Көс, ҡеүәт, ғәйрәт. *Ҡарыу ҡайтыу. Ҡарыуҙан ҡалыу. Ҡарыуҙан тайыу.* ■ *Һунарға йөрөргә минең ҡарыуым бөттө.* С. Кулибай. *Хәҙер аяҡ-быуын ҡалтырана, атларға ла йүнләп ҡарыу юҡ.* Б. Вәлит.

♦ **Ҡарыуҙы ойотоу** бик ныҡ асыуландырыу, һарыуҙы ҡайнатыу. *[Агроном:] Кешенән бик ҡаңғырам.. Маҙаһыҙлап бөтөрәләр, ҡарыуҙы ойоталар.* А. Игебаев. **Һүҙеңә ҡарыу** кеше һүҙен йөпләп, нығытҡанда әйтелә; һүҙеңә ҡеүәт.

**ҠАРЫУ** [3] *и.* **1.** Нимәгәлер ҡаршы эшләнгән яуап; ҡоһор. *[Йылан — Урал батырға:] Ай, егетем, ярҙам ит,.. ярҙамыңа ҡарыуға мин дә ярҙам итермен.* «Урал батыр». *[Сәлимә] бында иркенгә сыҡҡас, ҡыштың-ҡыш буйы сараһыҙҙан өндәшмәй телен тешләп йөрөгәндең ҡарыуын ҡайтара.* Ф. Иҫәнғолов.

**2.** Ҡылынған яуызлыҡҡа яуап итеп эшләнгән уҫаллыҡ; үс, ҡон. *Ҡарыу ҡылыу.*

□ **Ҡарыу итеү** яуап ҡайтарыу, яуаплау. *Указдан тыш ылау бирмәйбеҙ тип ҡарыу иткән кешеләрҙе үлтермәк.* «Батыршаның хаты».

♦ **Бер һүҙеңә биш ҡарыу** әрепләшеп, яуаплашып торған кешегә әйтелә. **Уның ҡарыуы** сағыштырып, нимәгәлер ҡаршы ҡуйғанда әйтелә; уның урынына. *Сөнгәт бөгөн, ауырыған кеше кеүек, күңелһеҙ ине. Уның ҡарыуы башҡаларҙа шатлыҡ балҡый ине.* Ғ. Дәүләтшин. **Яҡшы һүҙгә ни ҡарыу** берәүҙең бер яҡшы кәңәше, һүҙенә яуап итеп әйтелә.

● *Ҡарыуға ҡарыу — ҡарт атҡа ябыу.* Мәҡәл.

**ҠАРЫУ** [4] *и.* Боронғо һуғыш ҡоралы. *Ҡарыуҙарҙы кейенеү.* ■ *Арыҫланды күреү менән батыр шашҡан: «Йә хоҙай, үҙең ярҙам бирә күр»,— тип, ҡарыуын ҡулына алып яҡынлашҡан.* «Бабсаҡ менән Күсәк».

**ҠАРЫУЛАНЫУ** *ҡ.* Көсләнеү, ғәйрәтләнеү. *Тыумышынан малай кәрһеҙ булһа, кәмһетмәгеҙ көс-хәл инмәҫ тип. Ҡарыуланып, майҙан күрке булһа, күпһенмәгеҙ билен бирмәҫ тип.* М. Ямалетдинов.— *Ә-ә! Һеҙ хәҙер икәүләшеп миңә ҡаршы ҡарыуландығыҙмы?!* Х. Мохтар.

**ҠАРЫУЛАШЫУ** *ҡ.* **1.** Бер-береңдән үс алышыу. *Дошман менән ҡарыулашыу.*

**2.** Ниндәйҙер көсләккә ҡаршы тороу; тартҡылашыу. *Аңһыҙ мәлдә Сәйет яуы йылҡыны килеп баҫа. Көтөүсе ни саҡлы ҡарыулашырға, йылҡыны бирмәҫкә маташһа ла, булдыра алмай* (Хикәйәттән).

**3.** Ҡаршы әйтешеү; әрепләшеү. *[Айсыуаҡ:] Килен, етәр, туҡта, яуаплашма!.. Ғәйеп бар бит, юҡҡа ҡарыулашма!* Х. Ғәбитов.

**ҠАРЫУЛЫ** *с.* Көслө, ҡеүәтле, ғәйрәтле. *Ҡарыулы кеше. Ҡарыулы булыу.* ■ *Балтырған, һарына, ҡуҙғалаҡ һурпаһы эсеп үҫһә лә, имәндәй төплө булып Рәкип ағай буйға еткән. Ғәйәт ҡарыулы булған.* С. Ильясов.

**ҠАРЫУҺЫҘ** [1] *с.* Көсһөҙ, ҡеүәтһеҙ, ғәйрәтһеҙ, хәлһеҙ. *Ҡарыуһыҙ кеше.*

**ҠАРЫУҺЫҘ** [2] *с.* Ҡаршылыҡһыҙ, яуапһыҙ; ыңғай, күндәм. //*Ҡарыуһыҙ тыңлау.* ■ *Был командир шулай ихтыярһыҙ, ҡарыуһыҙ йомшаҡ иптәш инде.* С. Әлибаев. *Аҡбуҙ сыгыр — мал ҡото, телгә килеп һөйләр ул. Ни теләһәң, бар эшең һис ҡарыуһыҙ эшләр ул.* «Аҡбуҙат».

**ҠАРЫУ-ЯРАҠ** *и. йыйн.* Төрлө һуғыш ҡоралы. *Таңдан-таңдан йөҙ һикһән батыр алған, ҡарыу-ярак, сайман һайлап алған, ил-йорт менән хушлашып, аманлашып, Тимерготло Мәсем ханга китеп ҡалған.* «Бабсаҡ менән Күсәк».

**ҠАРЫШ** *и.* **1.** Киреп ҡуйылған баш бармаҡ менән һуҡ бармаҡ араһына тиң үлсәү берәмеге. *Ул [Фәйзуллин] әле грамотаны насар белә .. Ҡасандыр аршынды ла белмәй, ҡарыш, һөйәм менән, аҙым менән үлсәй ине.* С. Агиш. *Күлдәгемдең итәктәре ергә етмәй бер ҡарыш* (Халыҡ йырынан). **Ҡарыш аялыҡ** оҙонлоғо бер ҡарыш та бер ая. *Томбойоҡ араһындагы был кескәй сөмбәйҙә әле лә, могайын, ҡарыш аялыҡ бәрҙеләр леберләшеп яталыр.* Н. Мусин. **Ҡарышҡа һалыу** ҡарыш менән үлсәү.

**2.** (*йәки* **бер ҡарыш**) Ниҙеңдер оҙонлоғон, буйын бәләкәсәйтеп әйткәндә ҡулланыла. *Бер ҡарыш ҡына.* ■ *Бында арыш сәселеп бөтмәгән, бер ҡарыш ер һөрөлмәгән.* Б. Бикбай.

◆ **Үҙе бер ҡарыш, һаҡалы мең ҡарыш** боронғо экиәттәрҙәге яуыз сихри ҡарт тураһында. *Аҡъял батыр ишекте аса, үҙе бер ҡарыш, һаҡалы мең ҡарыш бер ҡарт тора, ти* (Әкиәттән).

**ҠАРЫШҠАҠ** *с. диал.* Ҡарышмал.

**ҠАРЫШҠЫР** *с. кар.* **ҡарышмал.** *Бик ҡарышҡыр әҙәм. Ҡарышҡыр булыу.*

**ҠАРЫШЛАУ** *к.* Оҙонлоҡ һ. б. араны ҡарыш менән үлсәү. *[Нигмәтулла] өс урындан шына ҡагылган йыуан ҡарагай бүрәнәне бармагы менән ҡарышлап үлсәне.* Я. Хамматов.

**ҠАРЫШЛАУЫҠ** *и.* **1.** Ҡушар-ҡушар күп аяҡлы, йөнтәҫ селәүсен һымаҡ ҡорт; күбәләк ҡорто. *Йөнлө ҡарышлауыҡ.* ■ *Бына йөрөргә йәшел ҡарышлауыҡ сыкты. Ул .. бер һуҙылып, бер дугаланып үлән һабагын үлсәй-үлсәй, шәп кенә менеп китте.* К. Мәргән. **Ебәк ҡарышлауыгы** *шул уҡ* **ебәк ҡорто** (*ҡар.* **ебәк**).

**2.** *һөйл.* Быуынлы-быуынлы таҫма рәүешендәге оҙон машина-трактор тәгәрмәсе. *Танк ҡарышлауыгы.*

**ҠАРЫШЛАУЫҠЛАУ** *к.* Ҡарышлауыҡлы булыу, ҡарышлауыҡ менән ҡапланыу. *Ҡарышлауыҡланган агас.* ■ *[Йылдагы кеүек] муйыл агастары ҡарышлауыҡлаган.* И. Ғиззәтуллин.

**ҠАРЫШЛАУЫҠЛЫ** *с.* **1.** Ҡарышлауыҡ (1 мәғ.) менән ҡапланған, ҡарышлауығы булған. *Ҡарышлауыҡлы агас.*

**2.** *һөйл.* Ҡарышлауыҡ (2 мәғ.) һымаҡ быуын-быуын тәгәрмәсле. *Ҡарышлауыҡлы трактор.*

**ҠАРЫШМА** *с. диал.* Ҡарышмал. *[Булат:] Ул [Тимер] ҡарышма, үҙ һүҙлерәк кеше, но ыңгайына һыпырһаң, нисауа, йөрөй бирә,— тине.* Б. Бикбай.

**ҠАРЫШМАЛ** *с.* Кеше ыңғайына килмәй, гел ҡарышыусан; тиҫкәре, ҡарышҡыл. *Теге ҡарышмал председатель тәки ат бирмәне бит, юк артынан йөрөмәгеҙ, тине.* З. Биишева.

**ҠАРЫШТЫРЫУ** *к.* Үсектереп, сәмләндереп, ниндәйҙер эшләмәй торған нәмәне эшләтеү. *Баланы ҡарыштырма.*

**ҠАРЫШЫУ** [1] *к.* Ыңғайға килмәй, ҡаршы тороу; тиҫкәреләнеү. *Мәргүп, ҡарышып тормай, өйгә инеп, Ғәләүгә Шәхмиҙең кейемдәрен алып бирҙе.* Т. Йәнәби. *Тыуган яҡта һаман ҡарҙар яумай, ниңә ҡарышты һуң ҡышы ла.* А. Игебаев. **Ҡарышҡан кеүек** берәр теләккә нимәлер кире булып торғанда әйтелә. *Рәис, ҡарышкан кеүек, тагы һүҙ башланы.* Н. Мусин.

● *Эшләһәң, эш ҡарышмай.* Әйтем.

**ҠАРЫШЫУ** [2] *к.* Тартышып ҡатыу; ҡорошоу. *Ғариф староста уянып китте. .. Ул тороп ултырҙы һәм яңагы ҡарышканса иһәнәне.* Ж. Кейекбаев.

**ҠАСА-БОҪА** *р.* Йәшенеп-йәшеренеп кенә; һиҙҙермәй. *Ҡаса-боҫа йөрөү.* ■ *Йәш ҡыҙҙар ата-әсәләренән ҡаса-боҫа егеттәр менән күрешеү өсөн йорт-ҡура арттарына .. барган.* И. Абдуллин.

**ҠАСАБА** [*гәр.*] *и. иҫк. кит.* Бәләкәй генә ҡала; ауыл.

**ҠАСАҒАН** *и.* **1.** Тоттормай ҡасҡан мал. *Ҡыҙҙар, егеттәр, килендәр ҡолон тоторга ҡороҡ һөйрәп саңлауга сыкты. Ул ҡасагандарҙы баҫтырган егеттәр, ҡыҙҙар дыу килеп, арка тулып саба ине.* «Ҡуҙыйкүрпәс менән Маянһылыу».

**2.** Ҡасып та быҙауламаған мал. *Ҡасаганга әйләнеү.*

**ҠАСАҒУТ** *и.* Тарбаҡ ботаҡлы, ваҡ ҡына сәскәле болон үләне.

**ҠАСАҠ** *и.* **1.** Берәй төрлө афәт, һуғыш һ. б. ҙур бәхетһеҙлек арҡаһында торған ерен ташлап, ситкә ҡасҡан кеше.

**2.** Ҡасып, йәшенеп йөрөгән кеше; ҡасҡын. *[Хаммат — Закирга:] Нишләп ҡасаҡ кеүек төндә йөрөйһөң? Ни өсөн йөрөгәнеңде кем белә?* З. Биишева. *Киткән отряд, Урал тауҙарын гиҙеп, өс-дүрт коралһыҙ ҡасаҡ тотоп ҡайта.* Ш. Хоҙайбирҙин.

**ҠАСАН** *а.* **1.** *һор.* Берәй ваҡытты билдәләү, асыҡлау өсөн бирелгән һорауҙы белдерә; ҡайһы ваҡытта? *«Бәлә, һин беҙҙең башка ҡасан киләһең?» — тип һораган Аҡназар. Бәлә уга: «Ҡырк йылдан һуң»,— тип яуап биргән* (Әкиәттән). /Ниҙелер түҙемһеҙләнеп көткәндә әйтелә. *Ҡасан балҡыр икән ҡояш, сәсер рәхмәт нурын беҙгә?* Т. Йәнәби. / Хәл-ваҡиғаның булмаҫына баҫым яһар өсөн ҡулланыла. *Ошондай мәлдәрҙә лә һыйлашып, гөрләшеп ҡалмаһаң, донъяның ҡыҙыгын ҡасан күрәһең.* Ғ. Дәүләтшин.

**2.** *р. мәғ.* Ваҡыты асыҡлап билдәләнмәгәндә йәки билдәле булмағанда әйтелә; ҡайһы ваҡытта. *Нина ҡасан йоҡлай торгандыр — мин уны белмәйем.* Д. Юлтый. / Ниҙеңдер ваҡыты билдәһеҙ булыуҙы күрһәтеп әйтелә. *Ҡасандан бирле.* ■ *— Аш бешеп, ҡасан уны ашаганса, ҡарындары асып китер.* Һ. Дәүләтшина.

◆ **Бер ҡасан [да]** *йәки* **һис ҡасан** бер ҙә, бер осраҡта ла; бер ваҡытта ла. **Ҡасан ғына** күптән түгел, яңыраҡ. *Ҡасан гына ташландыҡ ятҡан өй, хәстәрле ҡатын-ҡыҙ ҡулы тейгәс, кәҙимге рәткә*

*кереп алған.* Б. Бикбай. **Ҡасан ғына булмаһын** һәр ваҡыт, һәр саҡ. *Ҡасан ғына булмаһын тәрбиәсе балаларҙы асыҡ йөҙ менән ҡаршылай.* **Ҡасан да [булһа]** *йәки* **ҡасан булһа** ла кәрәк ваҡытта; ҡасандыр, берәй ваҡыт. *Хаҡлыҡ ҡасан булһа ла бер табылыр әле, тип уйланды Сәғиҙә.* М. Тажи. *[Буре:] Мине үлтермәсе, егет! Ҡасан да булһа бер көнөңә ярармын* (Әкиәттән). **Һис ҡасан** һис бер ваҡыт, бер ваҡытта ла.— *Юҡ, Сәйҙел, һис ҡасан улай була алмай аналар.* Ғ. Сәләм. **Һәр ҡасан** теләгән бер ваҡытта, һәр ваҡыт. *Һәр ҡасан ҡыҙҙырһа көн, диңгеҙ йөҙөн ҡайнарлатып, быу булып күккә оса ла һыу булып ергә төшә.* Ш. Бабич. **Әллә ҡасан** бик күп ваҡыттан бирле; күптән. *[Әбей — Күсәккә:] Үҙ атайың әллә ҡасан үлгән һинең.* «Бабсаҡ менән Күсәк».

**ҠАСАНҒА** *һор.* Ҡайһы ваҡытҡа?, ҡайһы саҡҡа? *Йыйылыш ҡасанға билдәләнгән?*

◆ **Әллә ҡасанға** оҙаҡ, бик күп ваҡытҡа.

**ҠАСАНҒЫ** *а.* **1.** *һор.* Берәй нәмәнең ҡайһы ваҡытҡа ҡарағанын белер өсөн әйтелә; ҡайһы ваҡыттағы? *Был ҡасанғы газета? Числоһы ҡасанғы?*

**2.** *с. мәғ.* (*йәки* **әллә ҡасанғы**) Берәй нәмә йәки хәл-ваҡиғаның күп элекке ваҡытҡа ҡарағанына баҫым яһар өсөн әйтелә; бик күптәнге. *Ҡасанғы өй, һаман емерелмәй ултыра.* ■ *Уйҙар оса, уйнай хыял, әллә ҡасанғы бабайҙарҙың йырын тыңлай хыял.* Ш. Бабич.

**ҠАСАНДАН** *а.* **1.** *һор.* Ҡайһы ваҡыттан?, ҡайһы саҡтан? *Һин ул кешене ҡасандан беләһең?*

**2.** *р. мәғ.* (*йәки әллә* **ҡасандан**) Бик электән килгән эш-хәлде белдергәндә әйтелә; элек-электән, күптән. *Ҡасандан дуҫһығыҙ, һаман бер-берегеҙҙе белмәйһегеҙ.* ■ *Улар әллә ҡасандан бирле ирле-ҡатынлы булып тора, ти* (Әкиәттән).

**ҠАСАНДЫР** *р.* **1.** Ҡайһы ваҡытталыр, ҡайһылыр бер ваҡытта. *Һинең [егет] ҡасандыр бер килергә тейеш килэсәгең бар.* С. Агиш.

**2.** Элек бер ваҡыт; күптән. *Ҡасандыр беҙ [Йәмилев менән] бергә уҡый инек.* Ғ. Сәләм.

**ҠАСАП** [*ғәр.*] *и. кар.* **ҡассап.** *[Әхмәт] мал һуя торған ҡасапҡа килеп әләгә. Ошо [Орск] ҡалала балалығы, егетлеге үтә.* С. Агиш.

**ҠАСАР** *и.* Йәш ярымлыҡ тана. *[Өмөтбай:] Һыйырың нисәү тип ни — яңғыҙ бер ҡасарым. Аслыҡ йылдан бирле балалар за, үҙебеҙ ҙә аҡ төҫө күргәнебеҙ юҡ.* Ғ. Дәүләтшин.

**ҠАСАУ** *и.* **1.** Ағасты соҡоу, тишеү, уйыу өсөн ҡулланылған үткер яҫы осло ҡорал. *Йомро ҡасау. Яҫы ҡасау.* ■ *Ауыл осо. Иҫке зыяратта бер кәберҙең ҡырағай ташына үҫмер малай сүкеш, ҡасау менән исем яҙа. Үҙе бошона ..* Ҡ. Даян. **Бөрөш ҡасау** умарта, ялғаш һымаҡ нәмәне соҡой торған ҡасау. **Тырнаҡ ҡасау** тәгәрмәс тырнағына тишек тишә торған йомро ҡасау.

**2.** *диал.* Бырау. *Алмас ҡасау.* ■ *Тәрәндәге ҡаты тоҡом ҡатламдарын быраулау өсөн алмас ҡасауҙар ҙа тәү тапҡыр Башҡортостанда һыналды.* М. Хисмәтов.

**ҠАСАУЫР** *с. диал.* Үҙ юлын, үҙ һүҙен тотоусан.

**ҠАСИДӘ** [*ғәр.*] *кит. и.* Көнсығыш поэзияһында: баштан аҙағына тиклем бер төрлө рифмалы маҡтау шиғыры.

**ҠАСИР** *с. иҫк. кит.* Ҡыҫҡа, кәм, әҙ. *Камилдәрҙе хур күрер ундай әҙәм тыумыштан зирәклеге ҡасир булһа.* Аҡмулла.

**ҠАСҠАЛАҠ** *с.* Ҡасып, йәшенеп йөрөүсән. *[Миңнулла:] Йә, ҡайттыңмы, ҡасҡалаҡ малай?!* Ғ. Ибраһимов. // *Көтөүҙән бер ҡасып ҡайтып, яҙаһыҙ ҡалған мал ҡасҡалаҡҡа әйләнә.* И. Ғиззәтуллин.

**ҠАСҠАЛАҠЛЫ** *и. диал.* Йәшенмәк.

**ҠАСҠАР** *и. кар.* **ҡашҡар.** *Айыры ҡойроҡ, йылтын күҙ ҡасҡары күп Балҡантау.* «Заятүләк менән Һыуһылыу».

**ҠАС-ҠАСАН** *р. диал.* Ҡасандыр бер ваҡыт; ҡасан да. *Ҡас-ҡасан урманды ҡырҡып иген сәсерҙәр.*

**ҠАСҠЫ** *и. кар.* **ҡасҡын.** *[Шатморат:] Мин өндән биҙҙерелгән йәнлек кеүек, тау-урмандар араһында ҡасып-боҫоп йәшәйем. Мин — ҡасҡы.* Б. Бикбай.

**ҠАСҠЫН** *и.* **1.** Ҡасып, йәшенеп йөрөгән кеше; ҡасҡы. *Ҡасҡындар тураһында йырҙар.* ■ *Тора-бара был иҡәүгә үҙҙәре кеүек үк йәнә бер нисә ҡасҡын килеп ҡушылған.* Н. Иҙелбай.

**2.** Хәрби һәм башҡа хеҙмәттән ҡасып йөрөгән кеше.

**ҠАССАП** [*ғәр.*] *и. иҫк.* **1.** Мал һуйыусы; һуғымсы.

**2.** Мал һуя торған урын. *Ҡассап янынан үткәндә эшселәрҙең гөжләүе, күп мал еҫе Сәғиттең баярҙа эшләгән сағын иҫенә төшөрҙө.* А. Таһиров.

**ҠАССАПСЫ** *и. иҫк.* Итсе.

**ҠАСЫД** [*ғәр.*] *и. иҫк. кит.* **1.** Ниәт; теләк, маҡсат. *Заятүләкте үлтереү ҡасыды илә, алтмыш кеше бергә ҡош сөйөргә ауға сыҡҡан.* «Заятүләк менән Һыуһылыу».

**2.** *кар.* **ҡаҫта**[1]. *Беләһеңме, ҡасыдтан һөжүм шәриғәттә йөрөйҙөр үлтереү менән бер рәттә.* М. Ғафури.

□ **Ҡасыд итеү** (*йәки* **ҡылыу**) нимәлер эшләргә ниәтләнеү. *[Бер кеше — Заятүләккә:] Юлдаштарың һине үлтерергә ҡасыд ҡыла.* «Заятүләк менән Һыуһылыу».

● *Буре юлдашына ҡасыд ҡылмаҫ.* Әйтем.

**ҠАСЫР** *и.* Айғыр менән ишәктән булған ҡатнаш тоҡом хайуан. *Ҡасыр нәҫел бирмәй.* ■ *[Кәрим Хәкимовтар] .. тауҙарҙағы һуҡмаҡтар буйлап ҡайҙа йөк йөрөтә торған ҡасырҙар менән, ҡайҙа дөйәләр менән үттеләр.* Л. Ғадилов.. *Әй, Вәлиш, .. башҡаларҙың айғырынан көлмәгел ҡасырың менән.* Ш. Бабич.

● *Ҡасырҙан ат та тыумаҫ, ишәк тә тыумаҫ.* Әйтем.

**ҠАСЫРЫУ**[1] *ҡ.* **1.** Ҡасырға мәжбүр итеү, ҡасырға мөмкинлек биреү, ирек ҡуйыу. *Ҡасырып ебәреү.* ■ *Аҡ ҡуянҡайҙарҙы ай ҡасырҙым, аҡбуҙ атҡай менән баҫтырҙым* (Халыҡ йырынан).

**2.** *һөйл.* Йәшереп, йыйып ҡуйыу. *Баланан ҡасырып ҡуйыу.*

◆ **Ен** (*йәки* **шайтан**) **ҡасырыу** хөрәфәт буйынса, ниндәйҙер бер билдәһеҙ ауырыу менән ауырыған кеше (күберәк йәш ҡатын-ҡыҙҙы) ен ҡа-

ғылған тип, төрлөсә ырым ҡулланып, өшкөрөп, мылтыҡ атып булған ауырыуынан ҡотҡарыу йолаһы үткәреү. *Фәхри .. төн уртаһында тороп, ишек алдына сыға ла һауаға ҡарап һунар мылтығынан ата... Быны улар, бер ғәҙәт, ен ҡасырыу өсөн эшләнә тип аңлаталар ине.* Б. Бикбай. **Зәңге(лә) ҡасырыу** *ҡар.* **зәңге.** *Яҙ еткәс, беренсе өлгөргән емеш-еләк, йыуа һ. б. ашамлыҡты ҡабыр алдынан «иҫке ҡорһаҡ, яңы аш, сирем-сором тауға ҡас», тип әйтеп ашайҙар. Шуны зәңгелә ҡасырыу тип йөрөтәләр.* Ғ. Хөсәйенов. **[Ҡыҙҙы] ҡасырып алыу** *этн.* боронғо йола буйынса, ҡыҙҙың ата-әсәһе өйләнешергә ризалыҡ бирмәгән осраҡта, ҡыҙҙы урлап алып китеп, ситтә өйләнеү. *Тик Әхмәҙи ағай белмәһен инде. Ул тәүҙә бирергә риза булмаһа ла, атаһын еңә алмағас, хәҙер ҡаршы түгел. [Ҡыҙҙы] ҡасырыуға үлһә лә күнмәҫ, гәрләнер.* Һ. Дәүләтшина.

**ҠАСЫРЫУ** [2] *ҡ.* Орғасы малды иркәк малға ҡушыу; аталандырыу, тороҡтороу. *Иртә ҡасырыу. Яһалма рәүештә ҡасырыу.*

**ҠАСЫРЫШЫУ** *ҡ. урт. ҡар.* **ҡасырыу** [1].

**ҠАСЫУ** [1] *ҡ.* **1.** Кемдән йәки нимәнәндер ситкә йүгереп китеү. *Ҡасып ҡотолоу. Ҡасып китеү. Ҡурҡып ҡасыу.* ■ *[Нәркәс:] Ошо егет тотоп алды, китә алманым мин ҡасып.* «Аҡбуҙат». *Айғыр эште һиҙеп алып .. атылып сыҡҡан да ҡасҡан* (Әкиәттән). *Апаҡайым, ишек ас, үҙең бер яҡ ситкә ҡас* (Әкиәттән). **Алып ҡасыу** баш бирмәй, сабып сығып китеү (еккән йәки менгән малға ҡарата). *Кәли ҡыҙып, атына һуҡты. Ат үрәпсеп китте лә алып ҡасты.* И. Ғиззәтуллин. / Тейеш бер нәмәлә ҡатнашмай китеү. *Дәрестән ҡасыу. Эштән ҡасыу.* / *күсм.* Тейеш йәки мөмкин булған нәмәнән ситләшеү, ялтарыу. *Яуаптан ҡасыу.* ■ *[Рәхимә — Ныязғолға:] Бармай ҡалыу ирлек түгел инде ул. Саҡырырға хәленән килмәне, ҡунаҡ күреүҙән ҡасты, тиер.* Һ. Дәүләтшина. / Күренмәҫкә тырышыу, йәшеренеү. *Ҡасып йөрөү. Ҡасып ятыу. [Бай:] Бына ошо «Йондоҙ ҡашҡа» бейәм йыл да ҡасып ҡолонлай. Ошо йәшемә етеп, бейәнең ҡолонон күргәнем юҡ* (Әкиәттән).

**2.** Кемдән йәки ҡайҙандыр йәшерен рәүештә китеү. *Ҡасып ҡайтыу.* ■ *Ҡуҙыйкүрпәс менән Маянһылыу .. күк толпарға атланып ҡасып китергә һүҙ ҡуйыштылар, ти.* «Ҡуҙыйкүрпәс менән Маянһылыу».

**3.** *күсм.* Нимәлер бөтөү, юғалыу, юҡҡа сығыу. *Әллә ҡайҙа ҡасты йоҡоларым, күҙҙәремде йомам — йоҡом юҡ.* С. Ҡулибай. **Оят ҡасыу** оятһыҙға әйләнеү, оятһыҙланыу. **Төҫ ҡасыу** берәй кисереш йәки сирҙән ағарыныу, ҡобара осоу. **Ҡан ҡасыу** *ҡар.* **ҡан** [1].

◆ **Ҡасып сығыу** ата-әсәнең ризалығынан тыш никахһыҙ кейәүгә барыу. *[Әсәһе — улына:] Бына атайың менән яратышып йөрөһәк тә, мине уға бирергә риза булманылар. Рәтен таптыҡ, бер төндө ҡастым да сыҡтым.* Ғ. Хәйри.

● *Айыуҙан ҡасҡан — бүрегә.* Әйтем. *Ҡасып китһәң дә сәсеп кит.* Әйтем.

**ҠАСЫУ** [2] *ҡ.* Иркәк мал менән ҡушылыу, аталаныу (һыйырға, һарыҡ-кәзәгә ҡарата).

**ҠАСЫУ-БОҪОУ** *ҡ.* Күренмәҫкә тырышыу; йәшенеү. *Ҡаса-боҫа йүгереү. Ҡасҡан-боҫҡан кеше. Ҡасып-боҫоп йәшәү.*

**ҠАСЫШЛЫ** *и. ҡар.* **йәшенмәк.** *Ҡасышлы уйнау.*

**ҠАҪА** *и.* **1.** Йылҡы малының (айғыр) ғәүрәтенең тышҡы ҡабы, ҡаплап торған көбө.

**2.** Айғыр һәм аттарҙың тоҡсаһы. *[Бейәнең] ҡолоно атҡа әйәргән дә киткән, аттың ҡаҫаһын имеп йөрөгән* (Әкиәттән).

**ҠАҪАЛАҠ** *и. диал.* Ҡаҫыҡ.

**ҠАҪМАҠ** *и.* **1.** Ҡайнаған һөттөң ярыланған өҫтө; өйрә, һөт-ҡатыҡ өҫтөнә ултырған яры һымаҡ нәмә; шекәрә. *Ҡаҙаның ҡаҫмаҡлы булһын* (Сеңләүҙән).

**2.** *һөйл.* Һөтлө аҙыҡ, бутҡа һ. б. бешергәндә һауыт төбөнә ҡатҡан көйөк.

**3.** Йәш баланың башында, лепкәһендә тыумыштан була торған ҡауаҡ. / *диал.* Тиренән ҡубырсып ҡойолған ҡауаҡ.

**4.** *диал. ҡар.* **турта** 1.

◆ **Әҙәм ҡаҫмағы** *диал.* әҙәм аҡтығы (*ҡар.* **әҙәм**).

**ҠАҪМАҠЛАНЫУ** *ҡ.* **1.** Ҡаҫмаҡ менән ҡапланыу, ҡаҫмаҡ барлыҡҡа килеү. *Эркет, ултыра торғас, ҡаҫмаҡланып киткән.* ■ *Танау осо ҡояшҡа бешеп ҡаҫмаҡланып торған йәш ҡыҙыл-армеец ярты шаҡмаҡ шәкәрен .. ҡола ҡашҡаһына ҡаптырҙы.* А. Таһиров.

**2.** Ойошоп ҡатыу, кейеҙләнеү (йөн, сәскә ҡарата). *[Януарҙың] .. ерәнһыу йөнө ҡаҫмаҡланып, урыны-урыны менән төләп бөткән.* «Ҡуҙыйкүрпәс менән Маянһылыу».

**ҠАҪМАУ** *и. диал. ҡар.* **турта** 1.

**ҠАҪТА** [1] [*ғәр.*] *и.* Яуыз уй, хаслыҡ, үс. *[Атаулла — Байморатҡа] Кеше хәбәренә ҡарап миңә ҡаҫта һаҡлама.* Н. Мусин.

**ҠАҪТА** [2] [*фарс.*] *и. диал.* Хәстә.

◆ **Тир ҡаҫтаһы** тир ауырыуы, тиф.

**ҠАҪТАҠ** *и.* Серегән бесән.

**ҠАҪТАЛЫ** *с. диал.* Сирле. *Ҡаҫталы кеше.*

**ҠАҪЫҠ** *и.* Эстең түбәнге өлөшө менән ике бот төбө араһы. *Есаул осло башлы итеге менән Талиптың ҡаҫығына типте.* А. Таһиров.

**ҠАТ** [1] *и.* **1.** Аҫлы-өҫлө йәки йәнәш-йәнәш булған бер нисә нәмә һаны. *Бер ҡат тәҙрә. Ике ҡат юрған. Ике ҡат йөҙөк кейеү. Өс ҡат уҡа баҫыу.* ■ *Гәрәй түргә менеп, аҫтына ике ҡат мендәр һалып, аяҡтарын бөкләп ултырҙы.* Б. Бикбай. /Бөтәһе бер бөтөн, комплект тәшкил иткән нәмәләр (кейем-һалым, ҡаралды һ. б. ҡарата). *Бер ҡат кейем-һалым. Бер ҡат кейендереү.* ■ *[Аҡназар:] Әйе, баҙарҙан үҙебеҙгә лә берәр ҡат кейем алып ҡайтырмын.* Ғ. Дәүләтшин.

**2.** Аҫлы-өҫлө йорт йәки башҡа ҡоролманың бер кимәлдәге айырым өлөшө. *Аҫҡы ҡат. Өҫкө ҡат.* ■ *Пароходтың аҫҡы ҡатында кемдер моңландырып гармун уйнап ебәрҙе.* М. Тажи.

**3.** Эш-хәлдең башҡарылыш, үтәлеш һаны; мәртәбә, тапҡыр, ҡабат. *Биш ҡат әйтеү. Ике ҡат бикләү.* ■ *Үткән көндөң гәйебен аҡлар өсөн ун ҡат артыҡ эшлә иртәгә.* Ғ. Әмири.

◆ **Ете ҡат** 1) хөрәфәт буйынса, ер менән күктең бөтә ҡалынлығын тәшкил иткән аҫлы-өҫлө ете ҡатлам. *Ете ҡат ер. Ете ҡат күк.* ■ *[Байрамғол:] Мин ул Аппаковты таныйым. Ете ҡат ер аҫтынан табырмын мин уны.* Р. Ниғмәти; 2) бик күп, бик ҡалын йәки ҙур, тәрән һ. б. *Ете ҡат тире-*

*не тунау. Ете ҡат урманды сығыу.* ■ *[Гөлнур:] Ҡарамалы ауылы анауы тауҙарҙың аръяғында. Ете ҡат ҡара урманды үтеп, ете тау артылып килерһең инде, Сәғиҙәкәйем.* М. Тажи. *Ҡарттың бөтә донъяһы ете ҡат йоҙаҡ аҫтында.* А. Ғирфанов.

● *Ете ҡат үлсә, бер ҡат ҡырҡ.* Әйтем.

**ҠАТ** [2] *диал. и.* Эргә, ян. *Өй ҡатында ултырыу. Юл ҡатында үҫкән ағас.*

**ҠАТ** [3] *р. диал.* Өҫтө-өҫтөнә; тығыҙ. *Эш бик ҡат килде.*

**ҠАТА** [1] *и.* **1.** Күндән тәрән калуш һымаҡ итеп теккән боронғо аяҡ кейеме (сарыҡ, итек, ситек өҫтөнән кейелгән). *Күн ҡата. Ҡуныслы ҡата. Суҡлы ҡата.* ■ *Хәҙрәттең салшайып бөткән ситеге менән ҡатаһы йәмһеҙ.* И. Насыри.

**2.** Ҡатын-ҡыҙҙың ҡуҙырлаған тула ҡуныслы, күн башлы, бейек үксәле аяҡ кейеме. *Ҡата кейеү. Ҡата тегеү.* **Суҡлы ҡата** төрлө төҫтәге йөн суҡтар менән биҙәлгән, ҡәҙерлегә кейелә торған ҡата. *Урамығыҙ матур икән суҡлы ҡата кейергә* (Халыҡ йырынан).

**3.** *һөйл.* Тиҙ генә эләктереп кейергә уңайлы булған, еңелсәгә кейә торған аяҡ кейеме. *Ҡата эләктереп сығыу.*

♦ **Бышым ҡата** *ҡар.* **бышым** 1.

**ҠАТА** [2] *бәйл. диал. ҡар.* **табан** [3]. *Мин һәр ерҙә: шағир өҫтәлендә заман йырын яҙам төн ҡата.* Х. Ғиләжев.

**ҠАТАЙ** *и.* Көнсығыш Башҡортостандағы бер башҡорт ырыуының исеме. *Оло ҡатай. Бала ҡатай.* ■ *Хәбәрем бар күп ерҙәрҙән, батыр ҙа батыр ирҙәрҙән, тамъян, ҡатай, бөрйәндән .. Бары ла әҙер торалар.* Салауат Юлаев. *Яландың ҡап уртаһынан сик һыҙығы үткән: бер яҡта ҡатайҙар, икенсе яҡта табындар көн күргән.* Ә. Вахитов.

● *Ҡатайҙы дауға ҡуй, тамъянды яуға ҡуй.* Әйтем.

**ҠАТАЛАҠ** *и.* Эс ҡатыуы. *Баланың эсе ҡаталаҡ булған.*

**ҠАТАЛАҠЛАУ** *ҡ. һөйл.* Эс ҡатып ауырыу; эс ҡатыу, ҡаталау.

**ҠАТАЛАУ** *ҡ. ҡар.* **ҡаталаҡлау.**

**ҠАТАР** *и.* **1.** Кемгә йәки нимәгәләр яҡын урын; ян, эргә. *Иҙән шығырлап ишек ҡатарындағы кешенең ситкәрәк киткәне, үҙ алдына һөйләнгәне ишетелде.* Ғ. Ғүмәр.

**2.** *с. мәғ.* Береһе береһенә яҡын; эргәләш. *Ҡатар өйҙәр. // Ҡатар барыу. Ҡатар тороу. Ҡатар ултырыу. Ҡатар ятыу.* ■ *Теләмәне Гөлгөл һаҡмар буйлап, Фәтхел менән ҡатар атларға.* Р. Ниғмәти. *Алыҫҡа китеп, урман артына боролған ҡатар тимер юлда бер нәмә лә ҡалмағас ҡына, ул [Рәүфә] .. ҡайтыр яҡҡа йүнәлде.* Ә. Вәли.

**3.** *күсм.* Бер төрлө кимәл, бер төрлө дәрәжә. *Тормош менән ҡатар атлау.* ■ *Шулай итеп әллә кеше ҡатарына ла сығып булыр әле.* Ғ. Дәүләтшин. / *күсм.* Бер тиң булып; бергә. *Улар ҡатар үҫеп, сәскә атҡан йәшлектәренең бер йәмле ваҡытында осрашты.* Һ. Дәүләтшина.

♦ **Бер ҡатар(ҙа)** 1) бер булып, бергә. *Коммунарҙар менән бер ҡатарҙа колхоз төҙөй иҫке утар ҙа.* Ғ. Амантай; 2) бер рәттә, бер кимәлдә. *Рус теле менән бер ҡатар башҡорт теле дәүләт теле итеп танылды.* ■ *Ат башында йөрөгән бер ҡатар малайҙар хәҙер ғаилә башлыҡтары булып, үҙҙәре бала тәрбиәләй.* Ҡ. Аралбаев.

**ҠАТАРҘАН** *р.* Бер рәттән, йәнәш, эргәләш. *Семәрләп яһалған ике һандыҡ аяғы өҫтөнә .. ике ҡалайлы һандыҡ ҡатарҙан ултыртылған.* Ғ. Дәүләтшин.

♦ **Бер ҡатарҙан** 1) бер төрлө, бер үк шарттарҙа. *Үткән йыл тары утауында мин ҙур кешеләр менән бер ҡатарҙан утаным.* М. Ғафури; 2) бер үк ваҡытта, бер ыңғайҙан. *Төхфәт Морат әҙәби әҫәрҙәр менән бер ҡатарҙан мәҡәләләр менән сығыш яһай.* «Йыр сафта ҡала», 1960.

**ҠАТАРҘАШ** *с. диал.* Йәштәш, тиҫтер.

**ҠАТАРЛАНЫУ** *ҡ. ҡайт. ҡар.* **ҡатарлау.** *[Тимергәле ҡарт:] Ай, Ныяҙгол ҡусты, .. һинең атайың мәрхүм менән ошолайтып мәсеттән ҡатарланып ҡайта торғайныҡ.* Һ. Дәүләтшина.

**ҠАТАРЛАУ** *ҡ.* Үҙ-ара яҡын, эргәләш итеү, эргәләш булыу, ҡатар итеү. *Ҡатарлап баҫылған уҡа. Ҡатарлап атлау. Ҡатарлап ултырыу.*

**ҠАТАРЛАШЫУ** *ҡ. урт.* Ҡатар (2 *мәғ.*) булыу. *Ҡатарлашып атлау. Ҡатарлашып тороу.* ■ *Ике һыбай аттарын аяңлатып, ҡатарлашты.* И. Көҫәпҡол.

**ҠАТАРЛЫ** *с.* Нисәләр рәттән, ҡатарҙан торған. *Ике ҡатарлы гармун тауышы казарма эсен шаулата.* А. Карнай.

**ҠАТАРЪЯН** *и. диал. ҡар.* **селәүсен** 1.

**ҠАТАСАН** *р.* Ҡата ғына кейгән көйө. *Ҡатасан һыуға төшөү.*

**ҠАТАУ** *и.* Ҡағып ултыртылған ҡаҙыҡ, бағана. *[Әлибай:] Дуҫ өсөн таш ҡатау һымаҡ нык торорға кәрәк.* Ғ. Ибраһимов.

**ҠАТАШМА** *р. диал.* Тиҫкәре.

**ҠАТАШЫУ** *ҡ. диал.* Тиҫкәреләнеү.

**ҠАТЕЛ** [*гәр.*] *иҫк. кит.:* **ҡател ителеү** үлтерелеү. **Ҡател итеү** үлтереү.

**ҠАТИЛ** [*гәр.*] *и. кит.* Кеше үлтереүсе; башкиҫәр. *Мин түгел ҡатил, залим, меҫкен, зәғиф. Ниңә һуң мин гәрләнәм дә моңланам?* Ш. Бабич. *Гөнаһ ҡылған ҡатилдарға форсат юҡтыр* (Бәйеттән).

**ҠАТИРКЕН** *р. ҡыҫҡ. ф. һөйл.* Ҡаты иркен. *Ҡатиркен ҡыланыу.* ■ *Йорт хужаһы .. ситкә сығып китһә, улар [балалар] ҡатиркен ҡылана: уларҙың шаулауына тауыш алмаштырып булмай.* Ж. Кейекбаев.

**ҠАТИРКЕНЛӘҮ** *ҡ. ҡыҫҡ. ф. һөйл.* Ҡаты иркенләү. *Ҡатиркенләп китеү.* ■ *Ҡотлобай .. йомоштарын бишләтә арттырып һанай башланы. Дуҫы булғас, ҡатиркенләп китте.* Р. Солтангәрәев.

**ҠАТҠАҠ** *и.* Туңған ер, туңған юл; туңғаҡ. *Көҙгө ҡатҡаҡ.*

**ҠАТҠАҠЛАНЫУ** *ҡ.* Өҫтән батҡаҡ туңып ҡатыу (ергә, юлға ҡарата), туңғаҡланыу, туңаҙыу. *Аяҡ аҫты кисә көндөҙ иреп ҡалып, төнгө һыуыҡ менән ҡатҡаҡланған.* Һ. Дәүләтшина.

**ҠАТҠАЛАҠ** *и. диал.* Ҡатҡаҡ.

**ҠАТ-ҠАТ 1.** *с.* Бер нисә ҡаттан торған, бер нисә ҡатлы. *Ҡат-ҡат таҫма. Ҡат-ҡат мүйынсаҡ.* ■ *Бейек икән тауҙың ай баштары, ҡат-ҡат икән тауҙың таштары* (Халыҡ йырынан).

**2.** *р.* Бер нисә мәртәбә, ҡабат-ҡабат. *Ҡат-ҡат*

һөйләү. *Ҡат-ҡат өйрәтеү.* ■ *Тәнзилә әбей лесниккә ҡат-ҡат рәхмәт әйтте.* М. Тажи.

**ҠАТҠАЯҠ** [1] *и. диал.* Ҡатҡаҡ.

**ҠАТҠАЯҠ** [2] *с. диал. ҡар.* **ҡатҡыл 1.** *Машина һөтө сәйгә ҡатҡаяҡ була.*

**ҠАТҠЫЛ** *с.* **1.** Бер аҙ ҡатыраҡ, бик үк йомшаҡ түгел; ҡатыңҡы. *Ҡатҡыл үлән.* ■ *Таныш булмаған ҡыҙҙың ҡатҡыл ҡулының йылыһы ус төбөмдән китмәй торҙо.* Н. Мусин.

**2.** Тәне ныҡ, ныҡлы.— *Ай, маңҡорт, шуны мендерәләрме ни [атҡа], .. ҡатҡылыраҡ бер малайҙы мендермәй.* Ж. Кейекбаев.

**3.** *күсм.* Ҡаты тәбиғәтле, ҡырыҫ күңелле. *Ҡатҡыл кеше.*

**4.** *күсм. диал.* Һаран. *Килене ҡатҡылыраҡ.*

**ҠАТҠЫЛЛАНЫУ** *ҡ.* Ҡатҡылға (1 мәғ.) әйләнеү, ҡаты булыу. *Ҡатҡылланған туңғаҡ ерҙе ап-аҡ итеп, тәңкә-тәңкә ҡарҙар яуа.* Ғ. Ибраһимов.

**ҠАТҠЫРЫУ** *ҡ. диал.* Шарҡылдау. *Ҡатҡырып көлөү.*

**ҠАТЛАМ** *и.* **1.** Өҫтән йәйелеп, ҡаплап торған бер ҡат; ҡатлау. *Боҙ ҡатламы. Ерҙең өҫкө ҡатламы.* ■ *Ҡар ҡатламы ни тиклем ҡалын, йомшаҡ булһа, аҫтындағы йәнлек, кошка шул тиклем йылы була.* «Совет Башҡортостаны», 1970, 1 февраль. / *геол.* Ятҡылыҡ. *Гранит ҡатламы. Күмер ҡатламы. Нефтле ҡатлам. Өҫкө ҡатлам.*

**2.** *күсм.* Ижтимағи яҡтан социаль, культура һ. б. билдәләре буйынса бер төрлө булған халыҡ төркөмө. *Киң ҡатлам халыҡ.* ■ *Уның [Саяфтың] мулла һәм ҡулаҡтар ҡатламынан сыҡҡаны һәр һүҙенән күренеп тора.* С. Агиш. *Колхозсыларҙың аңһыҙ ҡатламы фермаға дөйөмләштерелгән һыйырҙарын кире алып ҡайта башланы.* Б. Бикбай. *Хәлкәй үҙе тормоштоң иң кәһәрле ҡатламынан сыҡҡан кеше.* Д. Юлтый.

**ҠАТЛАМА** *и.* **1.** Әсе ҡамырҙы йәйеп, өҫтөнә май, йомортҡа һөртөп, буй-буй ҡырҡып, йомарлап бешергән ваҡ икмәк. *Туйлыҡ һарыҡ менән бергә бер һандыҡ ҡустәнәс килтерелә, уның эсендә бәлеш, ҡатлама һәм башҡа аштар ҙа була* (Хикәйәттән).

**2.** *диал.* Бауырһаҡ. *Табаҡ та табаҡ ҡатламам, әсәкәйем бармай башламам* (Сеңләүҙән).

**ҠАТЛАМЛАНЫУ** *ҡ.* **1.** Ҡатлам-ҡатлам булыу, ҡатламға бүленеү. *Ҡатламланып ятҡан таш. Яр балсығы ҡатламланған.*

**2.** *күсм.* Ҡапма-ҡаршы ижтимағи синыфтарға бүленеү. *Ауылдарҙың синфи яҡтан ҡатламланыуы ла был яҡтарҙа [Ырғыҙҙа] иртәрәк башлана.* М. Минһажетдинов.

**ҠАТЛАНСЫҠ** [1] *с.* Ҡатланып-ҡатланып торған, ҡатлауланған. *Ҡатлансыҡ таш.*

**ҠАТЛАНСЫҠ** [2] *и.* Күйөшлө малдың ашҡаҙанындағы дүрт бүлектең береһе: ҡатлы-ҡатлы булып торған ҡарын.

**ҠАТЛАНСЫҠ** [3] *и.* Эйәр өҫтөнә һала торған күн тышлы кейеҙ.

**ҠАТЛАНЫУ** [1] *ҡ.* Ҡатлы-ҡатлыға әйләнеү, ҡатлы-ҡатлы булыу. *[Имайҙың] ҡалын елкәһе .. әллә нисә һыр булып, ҡатланып ята.* Һ. Дәүләтшина.

♦ **Күкрәк ҡатланыу** *ҡар.* **күкрәк.**

**ҠАТЛАНЫУ** [2] *ҡ. диал.* **1.** *ҡар.* **ҡатнашыу 1, 2.** *Улар беҙҙең эшкә ҡатлана.*

**2.** *күсм.* Тырышыу. *Мин әйттем: «Дәхи һәр тарафтан хәбәр вә хәл аңларға ҡатлан»,— тинем.* «Батыршаның хаты».

**ҠАТЛАУ** [1] *ҡ.* **1.** Өҫтө-өҫтөнә ҡуйыу, бер нисә ҡат итеү. *Китаптарҙы ҡатлап өйөп ҡуйыу. Ҡатлап теҙеү. Таҡталарҙы ҡатлап һалыу.*

**2.** Бер ҡатлы нәмәгә икенсе ҡат өҫтәү. *Ишекте ҡатлау. Күлдәкте ҡатлап кейеү.* ■ *[Булат:] Кәртә башын ҡатлап һалам менән яптым әле.* Б. Бикбай. / Бер буй йөн, еп һымаҡ нәмәләргә икенсе ҡат өҫтәп ике ҡатлы итеү. *Еп ҡатлау. Йөн ҡатлап сиратыу.* ■ *Дебетте иләйҙәр ҙә еп ҡушып ҡатлайҙар.*

**3.** *һөйл.* Сәсеү ерен икенсе ҡатҡа һөрөү. *Парҙың икенсе ҡатын ҡатлау.*

**ҠАТЛАУ** [2] *и. ҡар.* **ҡатлам 1.** *Таш ҡатлауы.*

**ҠАТЛАУ** [3] *и. диал.* Бала итәк, ҡатмар. *Ҡатлау һалып тегеү.*

**ҠАТЛАУЛАНЫУ** *ҡ.* Ҡатлаулы булыу, ҡатлауҙарға бүленеү. *Ҡарағусҡыл болоттар ҡатлауланып тора.*

**ҠАТЛАУЛЫ** *с.* **1.** Бер нисә ҡатлау [2] булған, ҡатлы-ҡатлы. *Ҡатлаулы болоттар.*

**2.** *күсм.* Үҙ-ара булған мөнәсәбәт, бәйләнештәр төрлөсә, күп яҡлы булған; ҡатмарлы. *Тормош ҡатлаулыраҡ романдарҙан.* Ғ. Сәләм.

**ҠАТЛАУЫС** *и. диал.* Кәпрән.

**ҠАТЛЫ** *с.* Нисәләр ҡаттан [1] (1, 2 мәғ.) торған. *Бер ҡатлы тәҙрә.* ■ *Алтмыш ҡатлы бейек күкһел йорттар, болоттарға табан үрелер..* Х. Ҡунаҡбай. *Аяғына кейгән итегенең ике ҡатлы икән олтаны* (Халыҡ йырынан).

♦ **Бер ҡатлы** хәйләһеҙ, эскерһеҙ, ябай. *Мин, бер ҡатлы, кеше көлдөрәм тип, күҙҙе бәйләп, көршәк ҡыйраттым.* М. Кәрим.

**ҠАТЛЫҠ** *и.* Дебеткә ҡушып ҡатланған еп.

**ҠАТЛЫ-ҠАТЛЫ** *с.* Бер нисә ҡаттан торған. *Үҙе һалған һуҡыр, тәҙрәһеҙ, ҡатлы-ҡатлы һалҡын төрмәләр — кемдәр өсөн?* Ғ. Хәйри.

**ҠАТЛЫЛЫҠ: бер ҡатлылыҡ** хәйләһеҙлек, эскерһеҙ ябайлыҡ. *Гөлнараның .. кешеләрҙең бер ҡатлылығынан көлөүе, ауыл гөрөф-ғәҙәттәренә мыҫҡыллап ҡарауы .. һ. б. шундай хәлдәр иҫкә төш[ә].* Н. Мусин.

**ҠАТМА** [1] *с.* Тейешенсә үҫә алмай, ҡатып ҡалған. *Ҡатма ғына башмаҡтар.* ■ *Ағас япраҡтарына, ҡатма үләндәргә .. ҡунған һоро туҙанды ямғыр йыуып төшөрҙө.* Ш. Янбаев.

**ҠАТМА** [2] *и. диал.* Сәсәтмә.

**ҠАТМАҠ** *и.* Кәбәндең, көшөлдөң боҙланып ҡатҡан өҫкө өлөшө.

**ҠАТМАЛАУ** *ҡ. һөйл.* Кәрәгенән тыш өҫтө-өҫтөнә ҡатлап ҡағыу, өҫтө-өҫтөнә ҡатыу. *Сөйҙө ҡатмалап бөткән.*

**ҠАТМАР** *и.* Ҡатын-ҡыҙ күлдәгенең итәгенә үҙ ишенән уратып һалған тар буй; мәскәү. *Ҡатмар һалыу.*

♦ **Ҡырҡ ҡатмар** *диал. ҡар.* **ҡатлансыҡ** [2].

**ҠАТМАРЛАНДЫРЫУ** *ҡ.* Ҡатмарлыға әйләндереү, ҡатмарлы итеү. *Ҡоралды гәскәрҙең таратылыуы, .. төрлө шайкаларҙың ишәйеүе хәлде тағы ла нығыраҡ ҡатмарландырҙы.* Я. Хамматов.

**ҠАТМАРЛАНЫУ** *ҡ.* Ҡатмарлыға әйләнеү, ҡатмарлы булыу. *Эш ҡатмарлана.* ■ *Приискылағы ваҡиға ҡатмарланды.* Я. Хамматов.

**ҠАТМАРЛАУ** [1] *ҡ.* Ҡатмарлыға әйләндереү, ҡатмарлы итеү. *Йәшлек, тормош — бөтәһе лә ябай. Ә һин уны үҙең ҡатмарлайһың.* Ҡ. Даян.

**ҠАТМАРЛАУ** [2] *ҡ.* Ҡатмар [1] һалыу. *Ҡатмарлап күлдәк тегеү.*

**ҠАТМАРЛАШТЫРЫУ** *ҡ.* Ҡатмарлыға әйләндереү, ҡатмарлы итеү; ауырлаштырыу. *Ҡаты һыуыҡ, буран эште байтаҡ ҡатмарлаштырҙы.*

**ҠАТМАРЛАШЫУ** *ҡ.* Ҡатмарлыға әйләнеү, ауырлашыу, ҡыйынлашыу. *Эштәр ҡатмарлашты.* ■ *Артем ял итергә ятты. Башҡортостандағы ҡатмарлашҡандан-ҡатмарлаша барған ваҡиғаларҙы иҫенә төшөрөп эсе бошто, ярһыны.* Я. Хамматов.

**ҠАТМАРЛЫ** [1] *с.* Ҡатмар [1] һалып тегелгән. *Ҡатмарлы күлдәк.* ■ *Бибеш бөгөн һандыҡ төбөнән күп ҡатмарлы, өр яңы күк сатин күлдәк алып Емешкә бирҙе.* З. Биишева.

**ҠАТМАРЛЫ** [2] *с.* **1.** Төҙөлөшө менән бер нисә айырым өлөштәрҙән, бүлек, бүленештәрҙән торған, күп берәмекле; *киреһе* ябай. *Ҡатмарлы матдә. Ҡатмарлы сәскәләр ғаиләһе. Ҡатмарлы булыу. Ҡатмарлы итеү.*

**2.** Күп яҡлы, күп төрлө өлөштәрҙән торған. *Ҡатмарлы аппарат. Ҡатмарлы машина.* ■ *Ҡатмарлы технологик установкаларҙа халыҡ хужалығы өсөн бик кәрәкле күп төрлө продукция эшләп сығарыла.* «Совет Башҡортостаны», 1979, 30 апрель.

**3.** Ҡоролошо, төҙөлөшө бормалы-һырмалы; бай. *Ҡатмарлы биҙәк.* ■ *Урал көйөнөң .. ҡатмарлы моңо Айбулаттың ауыр уйҙарын, ялҡынлы хәсрәттәрен таратҡандай булды.* Һ. Дәүләтшина. / Эске тәбиғәте күп яҡлы; төрлө һыҙаттарҙы эсенә алған, ҡаршылыҡлы. *Бабич ул, бер ҡараһаң, бик ябай, икенсе ҡараһаң, гәжәп үҙенсә ҡатмарлы бер кеше ине.* С. Агиш. *Кеше үҙенең тәбиғәте менән бик ҡатмарлы, уның тышҡы күренешенән тыш эске донъяһы бар, кешене аңлар өсөн иң элек уның йөрәген аңлай белергә кәрәк.* М. Тажи.

**4.** Башҡарылышы, хәл ителеше һ. б. бик ауыр; аңлауға ҡыйын. *Ҡатмарлы мәсьәлә. Ҡатмарлы технология. Ҡатмарлы эш.* ■ *Хәрби врач Әхмәт Дәүләтов ауыр яралыларға ҡатмарлы операциялар яһай.* Ә. Ихсан. *Ул [Индрил] тағы ла тәрәнерәк, тағы ла ҡатмарлыраҡ фәлсәфәләргә инеп китә.* Д. Юлтый.

**ҠАТМАРЛЫЛЫҠ** *и.* Ҡатмарлы булған хәл, тормош. *Механизмдың ҡатмарлылығы. Мәсьәләнең ҡатмарлылығы.* ■ *Бейеү тигәндәй .. [бейеүселәрҙең] тән хәрәкәттәрендә лә, аяҡ йөрөшөндә лә күҙгә бәрелеп торған ҡатмарлылыҡ күренмәй.* К. Мәргән.

**ҠАТМАУ** *и. диал.* Бүртлек, сарлаҡ.

**ҠАТМАШЫУ** *ҡ. диал.* Ҡаҡашыу.

**ҠАТНАШ** [1] *с.* **1.** Төрлөһө бергә ҡушылған; ҡатыш. *Бесән менән ҡатнаш һалам. Көл ҡатнаш тупраҡ.*

**2.** Ни менәндер бер ваҡытта бергә булған, бергә ҡушылған; ҡатыш. **Ҡатнаш аҙыҡ** билдәле бер күләмдә туҡлыҡлы матдәләр, минераль тоҙҙар һәм витамин ҡушып яһалған мал аҙығы.

◆ **Ҡатнаш урман** япраҡлы һәм ылыҫлы ағастар аралаш үҫкән урман.

**ҠАТНАШ** [2] *и.* Ниндәйҙер бер эш-хәлгә туранан-тура булған бәйләнеш; ҡатнашлыҡ, ҡағылыш, ҡыҫылыш. *Ҡатнашы бар. Ҡатнашы юҡ.* ■ *Ҡыҙҙы үлемдән алып ҡалыуҙа өс егеттең дә ҡатнашы бар* (Әкиәттән).

**ҠАТНАШЛЫҠ** *и.* Берәр эш-хәлгә булған бәйләнеш; ҡатнаш; мөнәсәбәт, ҡағылыш. *Колхоздың бөтә эше колхозсыларҙың актив ҡатнашлығы нигеҙендә гәмәлгә ашырыла.* «Совет Башҡортостаны», 1969, 30 ноябрь. **Ҡатнашлыҡ итеү** ҡушылып бергә эш итеү; ҡатнашыу. *Димитров Болгарияла матбуғат эшселәре союзының эшендә актив ҡатнашлыҡ итә.* «Әҙәби Башҡортостан», 1948, № 7.

**ҠАТНАШМА** *и. ҡар.* **ҡатышма.**

**ҠАТНАШТЫРЫУ** *ҡ.* **1.** Бер нәмәне икенсе нәмәгә ҡушыу, ҡушып аралаштырыу, бутау, ҡатыштырыу. *Ҡатнаштырып ашау.* ■ *Өйҙәрҙең түбәһе ялпаҡ итеп, балсыҡ, көл, тиреҫ ҡатнаштырып ябылған.* Ғ. Дәүләтшин. *Һолоно кәрешкә йәки борсаҡ ҡатнаштырып сәсеү тулыһынса үҙен аҡланы.* «Совет Башҡортостаны», 1970, 28 февраль.

**2.** Башҡалар иҫәбендә ниндәйҙер бер эшкә йәлеп итеү. *Йыйылышҡа ҡатнаштырыу. Концертҡа ҡатнаштырыу. Ҡунаҡҡа ҡатнаштырыу.* ■ *[Сәғиҙә] Мансурҙың башҡаларға ҡатышмай, ситтәрәк торғанын күргәс, уйынға ҡатнаштырыу өсөн ҡулынан етәкләп алды.* М. Тажи.

**3.** Кеше менән аралашып йөрөргә юл ҡуйыу; аралаштырыу. *Күршеләр менән ҡатнаштырыу.*

**ҠАТНАШЫУ** *ҡ.* **1.** Икенсе бер нәмә менән ҡушылыу, ҡушылып аралашыу; ҡатышыу. *Саҡ ҡына өргән дымлы еләҙ ел сәскә еҫтәре менән ҡатнашып, бит, ҡул, муйындарҙы иркәләп һыйпай.* Һ. Дәүләтшина. **Ҡан ҡатнашыу** *шул уҡ* **ҡан ҡатышыу** (*ҡар.* **ҡан** [1] 3).

**2.** Башҡалар менән бергә берәр эш, хәл, ваҡиғала эшлеклелек итеү. *Йыйылышҡа ҡатнашыу. Уйынға ҡатнашыу. Һайлауға ҡатнашыу. Һуғышта ҡатнашыу.* ■ *Үҙ ғүмерендә күп донъя күргән, заманында йыр менән күп йыйындарҙа ҡатнашҡан етмеш йәшәр йырау ҡарт Ҡәҙерғол .. һүҙгә кереште.* Н. Иҙелбай. *Йәмәғәт ойошмалары үҙҙәренең устав бурыстарына ярашлы рәүештә дәүләт һәм йәмәғәт эштәренә идара итеүҙә, политик, хужалыҡ һәм социаль-культура мәсьәләләрен хәл итеүҙә ҡатнаша.* Башҡорт АССР-ының Конституцияһы, 1984.

**3.** Кеше менән яҡын бәйләнеш тотоу; аралашыу. *Ҡатнашып йәшәү.*

● *Яманға ҡатнашһаң, үҙеңде үлтерер; яҡшыға ҡатнашһаң, эшеңде бөтөрөр.* Әйтем.

**ҠАТНАШЫУСЫ** *и.* Нимәләлер ҡатнашлыҡ иткән, ҡатнашып йөрөгән кеше. *Концертҡа ҡатнашыусы. Һуғышта ҡатнашыусы. Уйынға ҡатнашыусылар.*

**ҠАТРАН** *и. иҫк.* Декабрь.

**ҠАТЫ** [1] *с.* **1.** Физик есемдәр тураһында: газ һәм шыйыҡлыҡтарҙан айырмалы рәүештә үҙ

формаһын һәм күләмен һаҡлай ала торған. *Ҡаты матдәләр. Ҡаты ягыулыҡ.*

**2.** Ҡырҡыу, бөгөү, ҡыҫыу, йәнсеү һ. б. физик тәьҫиргә ауыр бирелгән; *киреһе* йомшаҡ. *Ҡаты ер токомо. Ҡаты таш. Ҡаты тимер. Ҡаты сөй.* ■ *Беҙ ҡаты, тип таштар маҡтанмаһын, гранитты ла тишеп үтәбеҙ.* М. Кәрим. *Нормаль диаметрлы скважиналарҙы быраулау .. артабан дауам итте, алмас һәм ҡаты металдан эшләнгән бырауҙар һәм коронкалар һыналды.* «Совет Башҡортостаны», 1984, 30 апрель. / Билдәле бер кимәлдән ҡуйы. *Ҡаты бал. Ҡаты ҡаймаҡ.* ■ *[Тетя Даша] һыуга бешкән ҡаты тары бутҡаһын өлкән табаҡҡа ауҙарып, өҫтөнә .. киндер майы ҡойҙо.* Һ. Дәүләтшина. / Билдәле бер кимәлдән беше, шырт. *Ҡаты тауар. Ҡаты ит. Ҡаты күн. Ҡаты сәс.*

**3.** *күсм.* Булыу кимәле көслө булған, ныҡ. *Ҡаты ағым. Ҡаты буран. Ҡаты ел. Ҡаты ташҡын. // Ҡаты ағыу. Ҡаты буранлау. Ҡаты ташыу.* ■ *Башҡортостанда ҡыш ҡаты була, ваҡыты менән һыуыҡтар 40 градусҡа етә.* «Башҡортостан уҡытыусыһы», 1978, № 1. *[Бабсаҡ] алыҫ ерҙе туҡтамай ҡаты елеп, көтөп торған халыҡ ҡаршына барып етте.* «Бабсаҡ менән Күсәк». *Агиҙелкәйҙәрҙең аръягында ҡарҙан ҡаты төшкән ҡырау бар* (Халыҡ йырынан). / Ныҡ дәрәжәлә, аяуһыҙ булған. *Ҡаты ҡарғыш. Ҡаты кәһәр. Ҡаты нәфрәт.* / Ҙур кисерешкә дусар иткән, ауыр, көслө. *Ҡаты ҡайғы.* ■ *Үмәр ҡарт үйгә ҡалды .., уны ҡаты аптырашка ҡалдырған акса мәсьәләһе булды.* Һ. Дәүләтшина.

**4.** *күсм.* Рухи яҡтан ныҡлы, тотороҡло; көслө. *Ҡаты ихтыяр. Ҡаты характер. // Ҡаты булыу. Ҡаты тороу.* ■ *Был һүҙҙе [ҡарт] шундай тыныс әйтте, хатта ҡаты тәбиғәтле Гәрәй ҡалтыраныр китте.* Б. Бикбай. *Ул Разияның ҡаты торғанын күреп, эш сыҡмаҫын белде.* Н. Ҡәрип.

**5.** *күсм.* Үтәлеүе мотлаҡ булған, кәтғи, ныҡлы. *Ҡаты бойороҡ. Ҡаты закон. Ҡаты йола. Ҡаты план. Ҡаты талап. Ҡаты тәртип. // Мәсьәләне ҡаты ҡуйыу.* ■ *[Йыһанша:] Бына иптәш Янһаров бик тура, ҡаты сығыш яһаны.* Б. Бикбай. *Кейәүенә батша ҡаты шарттар ҡуя* (Әкиәттән).

**6.** *күсм.* Аяуһыҙ, тупаҫ мөнәсәбәтле, кешелекһеҙ, мәрхәмәтһеҙ. *Ҡаты сара. Ҡаты холоҡло. Ҡаты хөкөм. Ҡаты булыу. Ҡаты яуапҡа тарттырыу. // Кешегә ҡаты булыу.* ■ *[Тәңкәбикә:] Дәрәжәһе ҙур булган һайын бәндәләрҙең ҡаны ҡаты була.* М. Кәрим. *«Хәҙер мин һиңә яҙаның ҡатыһын бирәм»,— тигән Аҡъял батыр* (Әкиәттән). / Һаран. *Ҡаты кеше. Йомошҡа ҡаты.* ■ *[Әфләтүнов — председателгә:] Бик ҡиммәт һорайһыңдыр инде. Ҡатыһың бит һин, күршекәй.* Ә. Вәли.

**7.** *күсм.* Ауыр кисерелә торған, ғазаплы, көслө. *Ҡаты газап. Ҡаты ҡайғы. Ҡаты һөйөү. Ҡаты яза. Ҡаты яҙмышҡа дусар булыу. // Ҡаты газапланыу. Ҡаты көрһөнөү. Ҡаты ҡайғырыу. Ҡаты яратыу.* ■ *.. Һатлыҡ йәндәр барыһы ла ҡаты ҡайғы тулҡынында айкалдылар.* Ғәжәп эш. *Ер һелкетеп тор ҙа, бөтә милкеңде ташлап ҡара ер аҫтына керсәләң.* Т. Хәйбуллин. *.. Никахтан һуң эштең былай килеп сығыуына [Гөлйөҙөмдө Айбулат алып китеүенә Әхмәҙи] ҡаты гәрләнде.* Һ. Дәүләтшина.

**8.** Тәме ныҡ сыҡҡан, организмға тәьҫире көслө (сәй, тәмәке һ. б. ҡарата). *Ҡаты сәй. Ҡаты тәмәке. // Сәйҙе ҡаты эсеү. Сәйҙе ҡаты яһау.* ■ *Орҡоя .. ике шәшке ҡаты сәй эсте лә ҡарауатына барып ятты.* Ғ. Ибраһимов. *Ҡаты ғына яһап сәй эсһәң, күңел асылып китә.* М. Тажи.

◆ **Башы ҡаты** *ҡар.* **баш. Йомшаҡ түшәп ҡатыға ултыртыу** һәйбәт һөйләшкән булып, ғәмәлдә киреһен эшләгәндә әйтелә. *Ғәзимәһе туп-тура әйтә, ә Рәхимәһе йомшаҡ түшәп ҡатыға ултырта.* Һ. Дәүләтшина. **Күҙе ҡаты** *ҡар.* **күҙ. Ҡаты бауыр** (*йәки* **бәғерле**) кешене ҡыҙғанмаған, йәлләй белмәгән, кешелекһеҙ. *.. Егеттең йырҙары шул тиклем моңло булған, иң ҡаты бәгерле кешенең күңеле лә балауыҙ һымаҡ ирегән.* Ә. Вахитов. **Ҡаты йоҡо** бер ни тоймай торған, тәрән. *Ул [Константин] йөрөп ҡайтыуға, арып талыҡҡан Сурагол ҡаты йоҡоға сумғайны.* Т. Хәйбуллин. **Ҡаты күңелле** *ҡар.* **ҡаты бауыр. Ҡаты ҡолаҡ** *йәки* **ҡолаҡҡа ҡаты** 1) *ҡар.* **ҡолаҡ;** 2) *күсм.* һүҙгә иғтибар бирмәгән, иғтибарға алмаған кешегә ҡарата әйтелә. *Бригадир ҡаты ҡолаҡ шул, ҡаты ҡолаҡ. Шымартырға, күҙ буярға оҫта.* Ғ. Шәрипов. **Ҡаты ҡуллы** 1) талапсан, кәтғи. *Морат Тайморзин ҡаты ҡуллы хужа ине. Эшләтә лә белә, кешеләрҙең йөрәген дә аңлай торған иптәш тә, кәңәшсе лә ине.* М. Тажи; 2) мәрхәмәтһеҙ, усал, яуыз. *[Справник:] Молодец старшина. Шулай ҡаты ҡуллы булырға кәрәк.. — Берәүһен әләктерҙек, инде олоһо ҡалды.* Т. Хәйбуллин. **Ҡаты һыу** составында тоҙҙар күп эрегән, минераль тоҙҙарға бай һыу. **Ҡаты бәрелеү** (*йәки* **ҡағылыу**) кешегә ауыр һүҙ әйтеү, кеше менән тупаҫ мөғәмәлә итеү. *Ҡаты бәрелеп гәүам халҡын өркөткәнсә, һылап-һыйпап барын бергә бәйләү яҡшы.* Ш. Бабич. **Ҡаты ныҡыу** *ҡар.* **ныҡыу.**

● *Аҡман-тоҡман алты көн, алтыһы ла ҡаты көн.* Әйтем. *Ҡайтып инер ишегеңде ҡаты япма.* Әйтем. *Ҡаты ағасҡа ҡаты сөй.* Әйтем. *Һүҙ яраһы һөңгө яраһынан ҡаты.* Әйтем. *Эш ҡаты — аш татлы.* Әйтем.

**ҠАТЫ** [2] *и.* Ниҙең дә булһа кибеп ныгыған ҡыртышы. *Икмәк ҡатыһы.* ■ *Март башы. .. Төш ваҡытында юл ҡатыһы йомшара.* Ф. Иҫәнғолов.

**ҠАТЫ** [3] *и. диал. ҡар.* **ҡырау** 1. *Картуфты ҡаты ҡыҫты ла ҡуйҙы.*

**ҠАТЫҒЫУ** *ҡ.* Һөт менән ныгыныу (кеше һәм мал балаһына ҡарата).

**ҠАТЫҠ** *и.* **1.** Һөттө ҡайнатып, ойотҡо һалып ойотоп яһалған аҙыҡ. *Көҙгө ҡатыҡ. Сөсө ҡатыҡ. Әсе ҡатыҡ. Яңы ҡатыҡ. Аш ҡатығы. Ҡатыҡ ойотоу. Ҡатыҡ туҡыу. Ҡатыҡ эсеү.* ■ *Ризыгыбыҙ — икмәк-нандыр, ҡатыҡ, һөт, май һәм балдыр.* Ш. Бабич. **Аңра ҡатыҡ** насар ойоған, шыйыҡ ҡатыҡ. **Йылы ҡатыҡ** яңы ғына ойоп сыҡҡан ҡатыҡ. **Сей ҡатыҡ** ҡайнамаған һөттән үҙенән-үҙе ултырып ойоған ҡатыҡ.

**2.** *һөйл.* Ашҡа һалына торған ойотолған һөт, ҡорот һ. б. һөт аштары. *Әсе ҡатыҡ. Һурпаны ҡатыҡ менән эсеү. Ашты ҡатыҡ менән ашау. Ашҡа ҡатыҡ һалыу.*

● *Көҙгө ҡатыҡ, көмөш ҡашыҡ — ҡыҙым ме-*

иән кейәүгә; яҙғы ҡатыҡ, ярыҡ ҡашыҡ — улым менән киленгә. Әйтем.

**ҠАТЫҠЛАУ** *ҡ.* Ашҡа, һурпаға ашағанда ҡатыҡ ҡатыу. *Ашты ҡатыҡлау. Һурпаны ҡатыҡлау.*

**ҠАТЫҠЛЫ** *с.* Ҡатыҡ һалынған, ҡатыҡланған. *Ҡатыҡлы һурпа.* ■ *Ну, ошо ҡатыҡлы ашты яратам.* М. Ғафури.

**ҠАТЫ-ҠОТО** *и. йыйн.* Ҡатҡан һыныҡ-мыныҡ икмәк, тешләмдәр. *Ҡаты-ҡото ашау. Ҡаты-ҡото менән көн итеү. // Ҡаты-ҡото икмәк. Ҡаты-ҡото аҙыҡ.*

● *Икмәк юғы яманды: ҡаты-ҡото кимертә.* Әйтем.

**ҠАТЫЛАНЫУ** *ҡ.* Ҡатыға [1] (1—7 мәғ.) әйләнеү. *Секретарҙың ҡарашы ҡатыланды.* Х. Ғиләжев.

◆ **Ҡолаҡҡа ҡатыланыу** насар ишетеү, ишетмәй башлау.

**ҠАТЫЛЫҠ** *и.* **1.** *физ.* Ҡаты есемдең үҙ формаһы йәки өҫкө яғы бөтөнлөгө боҙолоуына ҡаршылыҡ күрһәтеү үҙсәнлеге; ныҡлыҡ.

**2.** Ҡаты [1] (2—9 мәғ.) булыу хәле. *Ерҙең ҡатылығы. Кешенең ҡатылығы. Көндөң ҡатылығы. Ҡулдың ҡатылығы. Сәйҙең ҡатылығы.* ■ *Түш менән шыуышып ҡороға сыҡтым. Ерҙең ҡатылығында, мине күтәреүендә шөбһә ҡалмағас, торҙом да аяҡҡа баҫтым.* Д. Юлтый. *Юламандың ҡатылығына, һаранлығына түҙмәй йәш егет әллә нисә рәт бынан китергә ынтылған.* Ә. Вахитов. *Яу мәлендә күрһәттек беҙ ҡатылыҡ, ҙур еңеүҙәрҙең бәхетен татыныҡ.* М. Кәрим.

**ҠАТЫЛЫУ** [1] *ҡ. диал.* Ҡағылыу, ҡул менән тейеү. *Гөлгә ҡатылһаң, япрағы ҡойола.*

**ҠАТЫЛЫУ** [2] *ҡ. төш. ҡар.* **ҡатыу** [2] 1. *Сөй менән ҡатылған таҡта.*

**ҠАТЫЛЫУ** [3] *ҡ. төш. ҡар.* **ҡатыу** [4]. *Ҡорот ҡатылған һурпа.*

**ҠАТЫМША** *и. һөйл.* Ҡатынша.

● *Ҡатымшанан ҡатын артыҡ.* Әйтем.

**ҠАТЫН** *и.* **1.** Үҙенә айырым сифаттарға, тәбиғи үҙенсәлектәргә эйә булған енес кешеһе; ир кешегә ҡапма-ҡаршы булған зат; бисә; *киреһе* ир. *Башҡорт ҡатыны. Рус ҡатыны. Йәш ҡатын. Оло ҡатын. Ҡатын булыу.* ■ *Ҡатындарҙың һөйләүҙәренән дә, үҙ күҙе менән күргәндәре буйынса ла Тимер Янһаров бер ниндәй һығымтаға ла килә алманы.* Б. Бикбай. *Бер өс йәшлек бала эйәртеп, йәп-йәш ҡатын керҙе баҡсаға.* Ғ. Сәләм. / Билдәле бер һөнәр вазифаны күрһәткән һөҙҙәр менән килгәндә, ҡайһы зат кешеһе икәнен белдерә. *Ҡатын врач. Ҡатын уҡытыусы. Ҡатын тәрбиәсе. Ҡатын директор. Ҡатын председатель.*

**2.** Никахлы ғаилә иптәше (иренә ҡарата); бисә. *Ауырлы ҡатын. Бисәү ҡатын. Тол ҡатын. Ҡатын алыу. Ҡатын булыу. Ҡатын итеү. Ҡатын итеп алыу. Ҡатын менән тороу. Ҡатынһыҙ йәшәү.* ■ .. *Магазин ябылыр алдынан, ҡатынын эйәртеп берәү килде. .. Ир булғаны бик нәҙек тә бик оҙон, ә ҡатыны — бик йыуан да бик ҡыҫҡа ине.* С. Агиш. *Миңлебай .. өй йылытып, тамаҡҡа әҙерләргә ҡатынына булышлыҡ итеп йөрөнө.* Т. Йәнәби.

◆ **Еңгә ҡатын** 1) элек ирҙә булып та икенсе тапҡырға егет кешегә кейәүгә сыҡҡан ҡатын-ҡыҙ. *Еңгә ҡатын алыу*; 2) *этн.* боронғо йола буйынса, ағай үлгәндән һуң, еңгәләтә алынған ҡатын. *Ул [Ирмоҡан] ире үлеп, тол ҡалған еңгә ҡатынға өйләнеп, уның йортона инде.* И. Көсәпҡол.

● *Еңгә ҡатында етмеш төрлө хәйлә була.* Әйтем. *Ирле ҡатын ил өҫтөндә, ирҙән ҡалһа, тел өҫтөндә.* Әйтем. *Ҡатынды яҡшы иткән егет, арбаны яҡшы иткән дегет.* Әйтем. *Ҡуштан ҡатын ире сыҡһа кейенер, ире ҡайтһа көйөнөр.* Әйтем. *Яман ирҙән яҡшы ҡатын алдараҡ.* Әйтем. *Яңғыҙ булыр егеткә биҙәү ҡатын тап булыр.* Әйтем.

**ҠАТЫНҠЫ** *с.* Тәне ныҡ; ныҡлы. *Оҙон ғына буйлы, ҡатынҡы кәүҙәле, үткер ҡарашлы Йософ ҡарт Фәиздең уй-фекерен белеп алды.* В. Исхаков. *// Шакир кәүҙәһен ҡатынҡы тотоп доклад бирә.* Н. Мусин.

**ҠАТЫН-ҠЫҘ** *и. йыйн.* **1.** Ирҙәргә ҡапма-ҡаршы заттағы кешеләр; ҡатындар һәм ҡыҙҙар. *Ҡатын-ҡыҙ яҙмышы. Ҡатын-ҡыҙ нәфислеге. Ҡатын-ҡыҙ йомшаҡлығы. Эшсе ҡатын-ҡыҙ.* ■ *Ата-әсәләр, ҡатын-ҡыҙҙар, бала-сағалар һуғышҡа китеүселәр менән һуңғы тапҡыр хушлаштылар.* Т. Тажи. *Зөлхизә был ерҙә ҡатын-ҡыҙҙарҙан тәүгеләрҙең тәүгеһе булып, мәңгелек тип иҫәпләнгән шомло йоланы емереп үтте.* З. Биишева. *// [Ғәрифуллин:] .. комсомолдың ҡатын-ҡыҙ делегатҡалар менән тығыҙ бәйләнеше булырға тейеш.* С. Агиш.

**2.** *күпл.* Ҡатындар һәм ҡыҙҙар өсөн тәғәйенләнгән нәмәне күрһәткәндә ҡулланыла. *Ҡатын-ҡыҙҙар кейеме. Ҡатын-ҡыҙҙар консультацияһы.*

◆ **Ҡатын-ҡыҙ ауырыуы** *мед.* ҡатын-ҡыҙ организмының үҙенсәлектәре менән бәйле ауырыуҙар. **Ҡатын-ҡыҙ мәсьәләһе** ҡатын-ҡыҙҙың йәмғиәттәге хәле, хеҙмәте, уларҙың граждандлыҡ хоҡуҡын ирҙәр менән тигеҙ итеү тураһындағы мәсьәлә.

**ҠАТЫНҠЫЛАНЫУ** *ҡ.* Тән ҡатынҡылыға әйләнеү; нығыныу. *Егеттең кәүҙәһе ҡатынҡыланып, тәненә ит ҡуныр ҡалған.* М. Хәйҙәров.

**ҠАТЫНҠЫУ** *ҡ. һөйл.* Оҙаҡ хәрәкәтһеҙ булыуҙан тән ҡатып китеү; ҡатыға әйләнеү. *Был кеше .. ултырған саҡта ҡатынҡып китҡән тәнен яҙып өсөн ҡолас йәйеп киреләде.* Н. Мусин.

**ҠАТЫНЛЫ** *с.* Өйләнгән, ҡатыны бар. *Ҡатынлы кеше.* ■ *Егет ҡыҙҙы ат өҫтөнән күтәреп төшөрә лә уҙҙәренә алып инеп китә. Егет ҡатынлы булып ҡала.* Ғ. Сөләймәнов. *// .. Ҡунаҡтар килеп тула башланы: һыбайлылар, пар атлылар, тройкалылар, ҡатынлылар, буйҙаҡтар — йәйләү һабантуйындағы кеүек сыбарланды.* Һ. Дәүләтшина.

**ҠАТЫНЛЫҠ** *и.* Ҡатын булғанлыҡ. *Ҡатынлыҡ вазифаһы. Ҡатынлыҡ бурысы. Ҡатынлыҡ хисе. Ҡатынлыҡҡа алыу. Ҡатынлыҡҡа һоратыу.* ■ *[Зөһрә] ир менән торған сағында ҡатынлыҡ бурысын .. үтәүҙән һәм ауырлыҡтан башҡаны һиҙмәне. Һөйөү һәм һөйөлөү уның өсөн ят тойғо ине.* Б. Дим. *Ҡыҙ әйткән: — .. Һин Алып батыр булаһың инде, .. әгәр ҙә көрәштә мине еңә алһаң, мин һиңә ҡатынлыҡҡа барам,— тигән* (Әкиәттән).

**ҠАТЫНША** *с.* Ҡатын-ҡыҙ холоҡло, ваҡсыл

(ир кешегә ҡарата). *Ҡатынша ир. Ҡатынша булыу.*

● *Ирҙәүкә булһа — ҡатындың яу, ҡатынша булһа — ирең яу.* Мәҡәл.

**ҠАТЫНШАЛАНЫУ** *ҡ.* Ҡатын-ҡыҙ эшенә, аш-һыуға ҡыҫылыу, ваҡсыл булыу. *Тейешһеҙгә ҡатыншаланып торма.* М. Тажи.

**ҠАТЫРҒА** *и.* Ҡалын ҡаты ҡағыҙ. *Ҡатырға менән тышлау. // Ҡатырға ҡумта. Ҡатырға төп. Ҡатырға тышлы. Ҡатырға папка.* ■ *Магазиндан өй йыһаздары алып ҡайтҡандар. Һәр әйбер ҡатырға менән көпләп, ағас рейкалар менән ҡоршалған.* Н. Мусин.

**ҠАТЫРҒАНЫУ** *ҡ.* **1.** Көс һалыу, көсөргәнеү. *Нәгимә һуғышҡа хәтле ҡатырғанып бер эш тә эшләмәне. Колхозда ла, өйҙә лә эштең ауырын Ғилман ағай күтәрә ине.* З. Биишева.

**2.** Ныҡ асыулы, көслө тауыш сығарыу. *Ҡатырғанып ҡысҡырыу.— Детдомға?! — Фатима ҡатырғанып ҡысҡырып ебәрҙе. .. Әллә мин бер баланы аҫрамаҫлыҡмы? Аҫрайым!* Б. Бикбай.

**ҠАТЫРМА** *и.* Майһыҙ табала бешерелгән йәймә.

**ҠАТЫРМАҠ** *и.* Аяҡ кейеменең үксәһе артына ҡуйылған ҡаты туҙ.

**ҠАТЫРША** *и.*, **ҡатырша майы** *ҡар.* **ғәтерше**. *[Йыһан:] Бына бик һәйбәт ҡатырша майы, еҫе инде әллә ҡайҙан аңҡып тора.* Х. Ибраһимов.

**ҠАТЫРЫУ** *ҡ.* **1.** Ҡаты хәлгә килтереү, ҡаты итеү. *Һыуы татырлы. Сәсте суҫҡа шырты һымаҡ ҡатыра ла ҡуя торған.* М. Тажи. / Ҡатҡан хәлгә килтереү. *[Балыҡты] спирт менән ҡатырып ҡуйғандар.* Д. Бураҡаев.

**2.** Туң хәлгә килтереү; туңдырыу. *Аяҡ аҫтын ҡатырған.*

**3.** Бөгөлөү-һығылыу һәләтен бөтөрөү. *Эйелеп эшләү билде ҡатыра.*

**4.** Ныҡ керләндереү, бик бысратыу. *Кергә ҡатырыу.*

**ҠАТЫУ** [1] *ҡ.* **1.** Ҡаты [1] (2 мәғ.) йәки ҡатыраҡ хәлгә килеү. *Кибеп ҡатыу. Таш кеүек ҡатыу. Цемент ҡатҡан.* ■ .. *Иҙәндең соҡор-саҡырҙарын әлдән-әле тигеҙләп һылап торғанға, тора-бара ул тип тигеҙ булып ҡатып киткән.* Ғ. Дәүләтшин. *Әбей уға [егеткә] әсе ҡатыҡ менән бер телем ҡатҡан икмәк кенә бирә* (Әкиәттән).

**2.** Туң хәлгә килеү; туңыу. *Боҙ ҡатҡан. Киске һыуыҡҡа аяҡ аҫты ҡата.* ■ *Марттың егерме бишендә һыу ҡатһа, бер аҙналыҡ юлға сыҡ.* Һынамыш.

**3.** *күсм.* Бик нык өшөү; туңыу. *Шыҡырайып ҡатыу.* ■ *Белештәре булмағас, [Сурағолға] 2-3 сәғәт буйы тышта ҡатып торорға тура килде.* Т. Хәйбуллин.

**4.** Дым, еүешлек етмәү, артыҡ ҡоро булыу йәки өлгөргәс оҙаҡ ултырыуҙан кибеү, ҡорошоу. *Үлән ҡатҡан. Бойҙай һарғайып ҡатҡан.* ■ *Йәй бик ҡоро булды. Игендәр баш ҡоҫмаҫ элек ҡатып ҡалды.* З. Биишева. / Кибеү. *Күн буйына елегә бәйләнгән, тамағы ҡатып сарсаған колондар ҙа ағытыла.* Т. Хәйбуллин.

**5.** Тән йәки тәндең берәр ере ауыртыу һ. б. сәбәптән шул ағзаларҙың хәрәкәт итеү мөмкинлеге сикләнеү йәки бөтөнләй хәрәкәтһеҙ ҡалыу. *Аяҡ-ҡул ҡатыу. Бармаҡтар ҡатыу. Бил ҡатыу. Күкрәк ҡатыу. Тән ҡатыу.* ■ *Ҡотлоғужа бабай көрәгән ҡуйып, билен яҙып алды ла: «Бил ҡата, уландар»,— тине.* Р. Солтангәрәев. *Хәлимдең кәкрәйеп ҡатҡан бармаҡтары ҡәләм тоторға һарап ипһеҙ.* З. Биишева. / *күсм.* Ҡурҡып йәки аптырап хәрәкәтһеҙ ҡалыу. *Ҡарап ҡатыу. Ҡатып ҡалыу. Таш һымаҡ ҡатып ҡалыу. Баҫҡан урында ҡатыу.* ■ *Әхмәт ни булғанын үҙе лә аңламай, аптырап ҡатып ҡалды.* И. Көҫәпҡол. *Мин кем артынан эйәрергә белмәй, баҫҡан урынымда ҡатып тороп ҡалдым.* Ә. Бикчәнтәев.

**6.** Нык керләнеү, бысраныу. *Кергә ҡатыу. Ҡаҡашып ҡатыу.* ■ *Старшина кеҫәһенән ҡатып бөткән янсығын сығарып, йырлаусыға бер нисә тин аҡса бирҙе.* Т. Хәйбуллин.

◆ **Арам ҡатҡыр** ҡарғағанда әйтелә.— *Ҡайҙа бороолдоң, бәррә! Уй арам ҡатҡыры!* Һ.Дәүләтшина. **Бауыр ҡатыу** *ҡар.* **бауыр. Баш ҡатыу** *ҡар.* **баш. Быуын ҡатыу** *ҡар.* **быуын. Йөрәк ҡатыу** *шул уҡ* **күңел ҡатыу** (*ҡар.* **күңел**). *Гөлйөҙөм иламай. Йөрәге донъя ҡоротоп йөрөгән дошмандарға асыу, нәфрәт менән ҡатҡан ине.* Һ. Дәүләтшина. **Ҡолаҡ ҡатыу** *ҡар.* **ҡолаҡ. Үрә ҡатыу** *ҡар.* **үрә** 1. **Һелә ҡатыу** *ҡар.* **һелә. Һын ҡатыу** *ҡар.* **һын. Шаҡ ҡатыу** бик нык аптырау; иҫ китеү. *Шаҡ ҡатып баҫып тороу. Шаҡ ҡатып тыңлау.* ■ *Иртәнсәк .. һәнәк менән сәнсеп үлтерелгән һеләүһенде, ә уның янында ҡанға батып ятҡан Бәхтиәр бабайҙы күреп шаҡ ҡаттыҡ.* И. Ғиззәтуллин. **Эс ҡатыу** *ҡар.* **эс** 1.

**ҠАТЫУ** [2] *ҡ.* **1.** Осло нәмәне һуғып, сәнсеп индереү; ҡағыу, сәнсеү. *Ҡаҙау ҡатыу. Ҡаҙыҡ ҡатыу. Сөй ҡатыу.* ■ *Турғайҙар бик йөҙәткәс, малайҙар тары өҫтөнә сыбыҡ ҡатып, иҫке сепрәктәр элде.* Ж. Кейекбаев. / Ҡаҙау менән ҡаҙаҡлау. *Таҡта ҡатыу.*

**2.** Буйҙан-буй сәнсеп үткәреп, эләктереү. *Ҡармаҡҡа ем ҡатыу.* / Эләктереп кейеү (аяҡ кейемен). *Калуш ҡатыу.* ■ *Бауһыҙ сабата ҡатып йөрөгән Зөләйха менән эт кенә өйҙә ине.* Ғ. Хәйри.

**ҠАТЫУ** [3] *ҡ. ҡар.* **ҡатлау** [1] 2.

**ҠАТЫУ** [4] *ҡ.* Ашҡа, һурпаға ҡатыҡ, ҡорот һалыу, һалып болғатыу. *Ашҡа ҡатыҡ ҡатыу. Һурпаға ҡорот ҡатыу.* ■ *[Ҡарлуғас:] Әсәй, бына мин айран ҡатҡайным, әсеп ебәр, йөрәгеңә ял булыр.* Б. Бикбай.

● *Яҡшы менән һөйләшһең, балға шәкәр ҡатҡандай.* Мәҡәл.

**ҠАТЫУ** [5] *и.* Эстең, күкрәктең нык итеп сәнсеп ауыртыуы. *Эсемдә ҡатыу алды. Ҡатыу сығыу.* ■ *Таймаҫҡа тырышып аяҡты серәп баҫа торғас, ҡатыу сыҡты, шулай ҙа туҡталмайым.* К. Кинйәбулатова. *[Хәмзә] хәле бөткәнсе, эсен ҡатыу алғансы йүгерҙе.* Ф. Әсәнов. *Пар күкрәгем эстәрендә ҡайғы ҡатыуҙары бар* (Халыҡ йырынан). **Эсте ҡатыу алыу** *ҡар.* **эс.**

● *Һөйләшмәй һатыу — күкрәккә ҡатыу.* Мәҡәл.

**ҠАТЫУ** [6] *и. шул уҡ* **эс ҡатыу** (*ҡар.* **эс** 1).

**ҠАТЫУ** [7] *и. диал.* Ҡатыҡ.

**ҠАТЫУЛАУ** [1] *ҡ.* Ҡаталаҡ менән интегеү, эс ҡатыу.

**ҠАТЫУЛАУ** [2] *ҡ.* Ҡатыу сығып эс ауыртыу. *Нык йүгергәнгә эс ҡатыуланы.*

**ҠАТЫУЛАУ** [3] *к. һөйл.* Ашҡа ҡорот-ҡатыҡ һалыу. *Бишбармаҡ та, иҙелгән эсе ҡорот менән ҡатыулаған һурпа ла етмәне.* Я. Хамматов.

**ҠАТЫУЛЫ** [1] *с.* Ҡатыу [5] менән ауырыған.

**ҠАТЫУЛЫҠ** *и. диал.* Ойотҡо.

**ҠАТЫШ** [1] *с.* Ни менәндер ҡушылған; аралаш, ҡатнаш. *Боҙ ҡатыш ҡар. Һоло ҡатыш арыш., Үпкә ҡатыш һуҙ.* ■ *Польша ҡышы. Көндөҙ ҡар ҡатыш ямғыр яуа.* Д. Юлтый.

**ҠАТЫШ** [2] *и.* Бер эшкә туранан-тура бәйләнеш; ҡағылыш, ҡыҫылыш. *Ҡатышы бар. Ҡатышы юҡ.* ■ *Дошманды еңеүҙә, колхозды байытыуҙа уның [Сафияның] тиҫтерҙәренең дә ҡатышы бар.* Ф. Рәхимғолова.

**ҠАТЫШМА** *и.* Бер нәмә икенсе нәмәгә ҡушылғандан барлыҡҡа килгән берләшмә.

**ҠАТЫШМАҠЛЫ** *с. һөйл.* Кеше менән аралашырға яратыусан, кешегә ҡатнашыусан. *Әбүбәкер кеше менән ҡатышмаҡлы, уйынсан, үҙе тура һүҙле батыр кеше булған.* «Башҡорт легендалары», 1969.

**ҠАТЫШМАҠҺЫҘ** *с. һөйл.* Кеше менән аралашырға яратмаған; ҡырыҫ. *Ҡатышмаҡһыҙ кеше. Ҡатышмаҡһыҙ булыу.*

**ҠАТЫШТЫРЫУ** *к.* **1.** Бер нәмәне икенсе нәмәгә ҡушыу, ҡушып аралаштырыу; ҡатнаштырыу. *Ҡатыштырып сәсеү. Русса ҡатыштырып һөйләү.* ■ *[Кәрим:] Әсәйем бер ус онға бер туҫтаҡ алабута орлоғо ҡатыштырып икмәк бешерә торғайны.* Я. Хамматов.

**2.** Башҡалар иҫәбендә ниндәйҙер эшкә ылыҡтырыу; ҡатнаштырыу. *Уйынға ҡатыштырыу. Йәштәр араһына ололарҙы ла ҡатыштырыу.*

**3.** Бер-береһенә барышып йөрөргә, бәйләнештә булырға юл ҡуйыу; ҡатнаштырыу, аралаштырыу. *Улын кешегә ҡатыштырмай.*

**ҠАТЫШЫУ** *к.* **1.** Икенсе бер нәмәгә ҡушылыу, ҡушылып аралашыу; ҡатнашыу. *Ҡыуыҡһыҙ янған бишле лампаның һөрөмө быуға ҡатышып, өйгә еҫ тарата.* Һ. Дәүләтшина. *Ике тамсы бер булды нур ҡатышып, ике йөрәк бер булды юлға төшөп.* Ш. Бабич.

**2.** Башҡалар менән бер рәттән эшмәкәрлек итеү; ҡатнашлыҡ итеү, ҡатнашыу. *Йыйылышҡа ҡатышыу. Туйға ҡатышыу. Эшкә ҡатышыу.* ■ *[Зөләйха:] Унда [уйында] ҡарап ҡына ултырыу гәҙәте булмай, бергә ҡатышырһың инде.* Т. Йәнәби. *Ултыра торғас, Сынбулатов та һүҙгә ҡатышты.* М. Тажи.

**3.** Кешеләр менән барышып-килешеү, бәйләнеш тотоу; аралашыу. *Ҡатышып йәшәү. Ҡатышып йөрөү.* ■ *Мин ауылда саҡта Байғужаларға бик һирәк ҡатыша торғайным.* Д. Юлтый.

◆ **Ҡан ҡатышыу** *ҡар.* **ҡан** [1] 3.

**ҠАУ** [1] *и.* Тамырында ултырып ҡышлаған ҡоро үлән; ҡаулан. *Ҡау үртәү—* ■ *Яҙғы ҡауға үрт һалһаң, утты ҡайҙан утларһың.* М. Буранғолов. *Бесән генә сапһам, салғым үтмәй, сабынымдың төбө ҡау икән* (Халыҡ йырынан). / Кипкән бесән ваҡы. *Бесәндең ҡауы күп, бәрәкәтһеҙ.*

◆ **Ҡау аҫтына ут төртөү** *ҡар.* **ут** [2] 1.

**ҠАУ** [2] *и.* **1.** Йылан-саян һымаҡ төрлө ҡорт, йәнлектәрҙең кибен төшкән көбө. *Йылан ҡауы. Йылан яҙ көнө ҡауын һала.*

**2.** Йәнлек, хайуандың иҫке йөнө; баҡта. *Ҡауҙы ҡойоу. Ҡау ташлау. Ноябрҙә тейендәр, ҡуяндар ҡауҙарын ҡоя.*

**3.** *диал. ҡар.* **йөҙлөк** [1].

**4.** *диал.* Ҡауаҡ.

● *Ялҡауҙың башы ҡау, үҙенә яу.* Әйтем.

**ҠАУ** [3] *и.* Саҡма таш өҫөн ағас бәшмәгенән киптереп, төйөп эшләнгән мамыҡ.

◆ **Диңгеҙ ҡауы** 1) күп күҙәнәкле ябай диңгеҙ тереклеге; 2) шул тереклектең йыуғыс урынына ҡулланылған йомшаҡ көпшәк кәүҙәһе.

**ҠАУАҠ** *и.* **1.** Сәс төбөнә йыйылған һәм кибеп ҡубып төшөп торған тире күҙәнәктәре. *Башымдың ҡауағы күбәйгән.*

**2.** *диал.* Көрпә.

**ҠАУАҠЛАНЫУ** *к. ҡар.* **ҡауаҡлау.** *Яҙғы, йәйге осорҙа күптәр баштың ҡауаҡланыуына зарлана.* В. Ғүмәров.

**ҠАУАҠЛАУ** *к.* Ҡауаҡ (1 мәғ.) барлыҡҡа килеү, ҡауаҡлы булыу. *Баш ҡауаҡлай.*

**ҠАУАҠЛЫ** *с.* Ҡауағы күп, ҡауағы бар. *Башы ныҡ ҡауаҡлы.*

**ҠАУАУ** *к. һөйл.* Ҡау [2] (2 мәғ.) булып ҡойолоу.

**ҠАУҒА** [*фарс.*] *и. ҡар.* **ғауға.** *Мәжлесенә ҡарай ғына дәғүәбеҙ бар, ҡоҙоғона ҡарай ғына ҡауғабыҙ бар.* Аҡмулла.

**ҠАУҒАҘАУ** *к.* Ҡауаҡланып ҡойолоу.

**ҠАУҒАҠ** *с. диал.* Кәүгәсел.

**ҠАУҒАЛАУ** *к. ҡар.* **ғауғалау.**

**ҠАУҒАСЫЛ** *с. ҡар.* **ғауғасыл.** *[Фәйрүш:] Әхтәм ул бик ҡауғасыл кеше, хәҙер килеп етер.* Ҡ. Даян.

**ҠАУҘАЙЫУ** *к. диал. ҡар.* **ҡапрайыу** 1.

**ҠАУҘАЛАУ** *к.* Кибеп, ҡубып ҡойолоу (ҡутыр, ҡысыу һымаҡ нәмәләргә ҡарата). *Ҡутыры ҡауҙалап тора.*

**ҠАУҘАУ** *к.* Кимереп ашағанда ваҡлап, сүпкә, кәүәккә әйләндереп бөтөрөү (сысҡандың нимәнелер кимереүе тураһында). *Сысҡан игенде ҡауҙап бөткән.* ■ *[Табибә әбей:] — Әлдә сысҡандар һандыҡҡа инә алмаған .. колонсағымдың китаптарын ҡауҙаламағандар икән әле.* З. Биишева.

**ҠАУҘЫ** *и.* Оҙон төҙ суҡышлы, оҙон аяҡлы аҡ йәки ҡара төҫтәге эре күсер ҡош. *Аҡ ҡауҙы. Ҡара ҡауҙы.* ■ *Дуға муйын ҡауҙы ултыра йоҡоға талып.* Б. Бикбай. *Ана ағас башында тутыйғош.. Ана ҡауҙы, .. селән...* Н. Нәжми.

**ҠАУҘЫН** *с. диал.* Ҡыҙмалы. *Характерҙар төрлө беҙҙең: мин ҡауҙын, ул баҫынҡы; минең эсемдәге — тышта, ә Нуретдин аҫтыртын.* Ғ. Әмири.

**ҠАУҘЫР** *с. диал.* Ҡыҙмалы. *Ҡауҙыр булыу.* ■ *[Бабай:] Үҙебеҙҙең бик тә шәп башҡорт егете бар икән. Әммә ләкин бик ҡауҙыр кеше, ҡайһы берҙә уңды-һулды шәйләп тормай. .. Иллә инде ут кеше.* В. Исхаҡов.

**ҠАУҘЫРЛАНЫУ** *к. диал.* Ҡапыл ҡыҙып китеү. *[Ҡорбан:] Һәләтерәк тотона башлаһаң, ҡабаланма, ҡауҙырланма, емерергә итәһеңме ни, тиҙәр.* С. Ҡудаш.

**ҠАУЖЫТЫУ** *к.* Ҡаҡшатыу, ныҡ йонсотоу. *Ҡартлыҡ ҡаужытты.*

**ҠАУЖЫУ** *к. диал.* Ныҡ йонсоп ҡаҡшау, туҙыу (кешегә ҡарата). *Ул ҡарт ҡаужаған инде, күпкә бармаҫ.* Т. Морат.

**ҠАУҠ-ҠАУҠ** *окш.* Яңғырауыҡлы ҡалын ҡош тауышын белдергән һүҙ. *Ҡаук-ҡаук килеү.*

**ҠАУҠЫЛДАУ** *к.* Ҡаук-ҡаук итеү, ҡаук--ҡаук килеү. *Төйләгән ҡаукылдай.*

**ҠАУЛАН** [1] *и.* **1.** Тамырында ултырып ҡышлаған ҡоро үлән; ҡау. *Ҡаулан үртәү.* ■ *Иртә яҙҙан .. беҙҙең һыйырҙар һауа алмаштырып, еллӛп, ҡаулан ашап ҡайталар.* И. Ғиззәтуллин.

**2.** *диал.* Ҡылған.

**3.** *диал. ҡар.* **баҡта** 1.

**ҠАУЛАН** [2] *и.* Үләндәр кипкән ҡоро миҙгел. *[Ҡотлоғужа:] Көҙгө ҡауланда кеше күмер үртәйме ни?* Н. Мусин.

**ҠАУЛАУ** *к.* **1.** Шаулап ҡыуыу. *Эттәр һауланы. Кемдер уянып бүре ҡауланы.* Ғ. Ғүмәр.

**2.** *күсм.* Талап итеп шаулау, даулау. *Күпте һайлап, юкты ҡаулайһың.* Ш. Бабич.

**ҠАУЛАШЫУ** *к. урт. ҡар.* **ҡаулау.** *Киттек урманға елӛккә, сабышып та ҡаулашып.* И. Насыри.

**ҠАУЛЫ** *и. диал.* Ҡауҙы.

**ҠАУРЫЙ** *и. диал.* Ҡауырһын. // *Ҡаурый кәләм менән шағирҙар бойһондорған ярты ер шарын.* М. Сөндөклө.

**ҠАУҺА** *с. диал.* Ҡапрый.

**ҠАУҺАЙЫУ** *к. диал. ҡар.* **ҡапрайыу** 1. *Йомарланып, ҡауһайып, кәбеҫтә лә өлгөргән.* А. Игебаев.

**ҠАУШАҠ** *с.* **1.** Тиҙ генә ҡаушап барыусан (кешегә ҡарата). *Ҡаушаҡ ҡыҙ.*

**2.** *диал.* Бушаҡ. *Көрәктең һабы ҡаушаҡ.*

**ҠАУШАТЫУ** *к.* **1.** Ҡаушарға мәжбүр итеү, ҡаушарға сәбәп биреү. *Гөлйөҙөмдөң күлөмһөрәп ҡараған матур күҙҙәре .. уны [Айбулатты] бигерәк ныҡ ҡаушатты.* Һ. Дәүләтшина.

**2.** *эйһ. ф. ҡар.* **ҡаушау.** *Йыйылышта һөйләргә генә торһам, ҡаушата ла ҡуя.*

**ҠАУШАУ** *к.* Ниҙәндер оялып, уңайһыҙланып йәки аптырап, ни эшләргә белмәй юғалыу. *Ҡаушап ҡалыу.* ■ *Ул [Ғариф] ошо отличник егет алдында һәр ваҡыт ҡаушап, уңайһыҙланып ҡала.* З. Биишева.— *Беҙ юлбаҫар! — ти Йылҡыбай менән Кейекбай. Был һүҙҙе ишеткәс, сауҙагәрҙәр ҡаушай төшә* (Әкиәттән).

**ҠАУШЫРМА** *и. диал.* Салғый.

**ҠАУШЫРЫЛЫУ** *к. төш. ҡар.* **ҡаушырыу.** *Ҡулдәктең иҙеүе ҡаушырылған.* ■ *Ғабдулла эштән ҡайтып, асыҡ тәҙрә янына килеп ултырҙы ла, башын ҡаушырылған ҡулдарына ҡуйып, .. уйға батты.* Д. Исламов.

**ҠАУШЫРЫУ** *к.* Уратып, әйләндереп алған нәмәнең ике ситен өҫтө-өҫтөнә ҡаплау. *Яулыҡты ҡаушырып бәйләү.* ■ *Бикәс тракторист егеттең иҙеүен ҡаушырып элеп ҡуйҙы.* Ф. Иҫәнғолов.

◆ **Ҡул ҡаушырыу** *ҡар.* **ҡул** [1] 1.

**ҠАУЫЛДАУ** *к. һөйл.* Ҡалын тауыш менән һөйләнеү, тауышланыу.

**ҠАУЫМ** [1] [*ғәр.*] *и. иҫк.* Халыҡ. *Һәр ҡауымдың үҙ йолаһы бар.*

**ҠАУЫМ** [2]: **бер ҡауым** *шул уҡ* **бер ғауым** (*ҡар.* **ғауым**).

**ҠАУЫМБАҠ** *и. диал.* Ҡауҙы.

**ҠАУЫН** *и.* **1.** Ҡабаҡтар ғаиләһенә ҡараған эре йәшелсә бирә торған еле һабаҡлы баҡса үҫемлеге. *Ҡауын баҡсаһы. Ҡауын орлоғо. Ҡауын үҫтереү.*

**2.** Шул үҫемлектең емеше. *Битләс ерҙә ҡауындар бешеп яталар аунап. .. Эсе татлы бал кеүек, йомшаҡ ҡына май кеүек.* Ғ. Ғүмәр.

**ҠАУЫН-ҠАРБУЗ** *и. йыйн.* Ҡауын һәм ҡарбуздар. *Ҡауын-ҡарбуз баҡсаһы.*

**ҠАУЫНЛАНЫУ** *к.* Ҡауынға тумалыу.

**ҠАУЫРҺЫН** *и.* **1.** Ҡош-ҡорттоң ҡаты үҙәкле эре йөнө. *Ҡанат ҡауырһыны.* ■ *Ҡаҙ ҡанатҡайҙарын ҡағыр инде, ҡауырһынҡайҙарым ҡалһын, тип* (Халыҡ йырынан). / Шул йөндөң ҡаты үҙәге. *Хәйруллин .. ҡауырһын һыҙлығын сығарып, тешен таҙарта.* С. Агиш.

**2.** (*йәки* **ҡауырһын ҡәләм**) *иҫк.* Ҡаҙ ҡанатынан эшләнгән ҡәләм. *Тел менән һөйләп тә, ҡауырһын менән яҙып та килештерерлек түгел, ти, был ҡыҙҙың һылыулығы* (Әкиәттән).

**ҠАУЫРҺЫНЛАНЫУ** *к.* Ҡауырһынға әйләнеү, ҡауырһынлы булыу. *Ҡаҙ бәпкәләре ҙурайып, ҡанаттары ҡауырһынланып килә.*

**ҠАУЫШТЫРЫУ** *к. йөкм. ҡар.* **ҡауышыу.** *Улар [Күсәй менән Күсмәй] балаларын бер--береһе менән ҡауыштырырға вәғәҙә ҡуйышалар.* К. Мәргән. *Йәшләй генә йәшкә, кәләм ҡашҡа, әй хоҙайым, мине ҡауыштыр* (Халыҡ йырынан).

**ҠАУЫШЫУ** *к.* **1.** Үҙ-ара тап килешеү, осрашыу, табышыу. *Ғәйшә, йәнем! Уйла, ..ниндәй ҡыйын булһа айырылышыу, .. шундай татлы булыр ҡауышыу.* Ғ. Амантай.

**2.** Өйләнешеп ҡушылыу. *Ҡауышыу көнө.* ■ *[Егет] килеп ҡыҙҙы ҡосаҡлап алған. Шунда былар туй үткәргәндәр, ҡауышҡандар, бергә тора башлағандар* (Әкиәттән).

**3.** Иркәк мал, йәнлек, ата ҡош-ҡорт һ. б. орғасы, инә менән үҙ-ара ҡушылыу. *Ҡауышыу осоро. Ҡауышыу осошо* (бал ҡортона ҡарата).

**ҠАФ** [*ғәр.*]: **Ҡаф тауы** 1) *иҫк.* Кавказ тауы; 2) *миф.* хөрәфәт буйынса, донъя сигендә ятҡан, аръяғында дейеүҙәр, ен-бәрейҙәр генә йәшәгән бик бейек тауҙар. *Түҙемгол Ҡаф тауы артындағы дейеү батшалығынан ҡасып китмәксе булған* (Әкиәттән). **Ҡаф тауы артында** бик алыҫта.

**ҠАФИӘ** [*ғәр.*] *и.* **1.** Шиғыр юлы аҙағындағы һүҙ ауаҙдашлығы; рифма. *Ҡафиәгә һалыу.* ■ *Күңелем бирелде бит сонетка. Күңелле ул, гүзәл ул, кескенә ул: ҡафиәлә бары ун дүрт кенә юл.* С. Кулибай.

**2.** (*баш хәреф менән*) Ҡатын-ҡыҙ исеме.

**ҠАФИӘЛӘҮ** *к.* Шиғыр юлының аҙағын ҡафиәле итеү, ҡафиәгә һалыу. *Ҡафиәләп яҙыу.*

**ҠАФӘС** [*ғәр.*] *и. иҫк. кит.* Ситлек. *Тик хәҙергә мин ҡафәстә ятҡан арыҫлан кеүек.* Х. Ғәбитов.

**ҠАХ-ҠАХ** *окш.* Тамаҡ төбө менән ныҡ йүткергән тауышты белдергән һүҙ. *Ҡах-ҡах итеү.*

**ҠАХЫЛДАУ** *к.* Ҡах-ҡах итеү, ҡах-ҡах килеү (йүткергәндә). *Ҡахылдап йүткереү.*

**ҠАҺАР** [*ғәр.*] *с. диал.* Бик ҙур. *Ҡаһар бүре.*

**ҠАҺАРҘАЙ** *с. диал.* Бик ҙур, әзмәүерҙәй.

**ҠАҺАРМАН** [*ғәр.*] *и.* **1.** Ҡыйыу йөрәкле кеше; батыр. *Ҡыҙыл Байраҡ ордены ҡаһарманы. Советтар Союзы Ҡаһарманы. Социалистик Хеҙмәт Ҡаһарманы. Һуғыш ҡаһарманы. Ҡаһарман булыу.* // *Ҡаһарман ир.* ■ *Утыҙ башҡорт*

*ҡаһарманы — атаевсылар дивизия тарихына яңы бит яҙҙы.* Ә. Ихсан.

**2.** (*баш хәреф менән*) Ир-ат исеме.

**ҠАҺАРМАНДАРСА** *р.* Ҡаһармандарға хас булғанса; батырҙарса. *Ҡаһармандарса күрәшеү.*

**ҠАҺАРМАНЛЫҠ** *и.* Ҡаһарман булыу; батырлыҡ. *Совет халкының Ватан һуғышындағы ҡаһарманлығы. Ҡаһарманлыҡ күрһәтеү.* ■ *Фронтта күрһәткән ҡаһарманлыҡтары өсөн Тыуған ил үҙенең тоғро улын [Локмановты] Икенсе дәрәжә Ватан һуғышы .. ордены менән наградлай.* Р. Зәйни.

**ҠАҺИР** [*ғәр.*] *и. иҫк. кит.* Йәберләүсе, иҙеүсе.

**ҠАҺ-ҠАҺ** *окш.* Тамаҡ төбө менән көлгәндә йәки ныҡ йүткергәндә сыҡҡан тауышты белдергән һүҙ. *Ҡаһ-ҡаһ йүткереү.* ■ *[Шәрипов] бер ваҡытта ла ҡысҡырып ҡаһ-ҡаһ менән көлмәҫ.* С. Агиш.

**ҠАҺҠАҺА** [*ғәр.*] *и.* Ныҡ шарҡылдап көлгән тауыш.

**ҠАҺҠАҺАЛАУ** *к.* Көслө шарҡылдау. *Ҡаһҡаһалап көлөү.* ■ *Ҡапыл ҡаһҡаһалап көлгән тауыш яңғыраны алыҫ-алыҫта.* Ш. Биккол.

**ҠАҺҮӘ** [*ғәр.*] *и. иҫк.* Кофе. *Ҡаһүә эсеү.* ■ *Беҙгә мәғлүм [Американың] ҡаһүәһе һәм һөттәре, бик матур һәйкәл һалынған эттәре.* М. Ғафури.

**ҠАҺҺАР** [*ғәр.*] *и. иҫк. кит.* Асыуланыусы, яза биреүсе, ҡәһәрләүсе. *Таштым, шаштым, ҡуптым тулҡындай; әле ғаффар булып, әле ҡаһһар.* Ш. Бабич.

**ҠАҺЫЛАЙ** *а. һөйл. ҡар.* **ҡалай**[2].

**ҠАШ**[1] *и.* **1.** Күҙ ҡабағының өҫтөндә һыҙылып үҫкән төк. *Ҡара ҡаш. Ҡыйғас ҡаш. Ҡаш араһы.* ■ *Мәрйәм ҡулын ҡуйып ҡашына, ҡояш нурҙарына ҡараны.* М. Кәрим. *Ҡара ғына ҡашлы матур егет урман юлҡайынан көн дә уҙа* (Халыҡ йырынан). **Ҡәләм ҡаш** 1) һыҙылып торған нескә ҡаш; 2) шундай ҡашлы ҡатын-ҡыҙ. *Йәшләй генә йәшкә, ҡәләм ҡашҡа, эй хоҙайым, мине ҡауыштыр* (Халыҡ йырынан). **Ҡаш сөйөү** (*йәки* **һикертеү**) ҡашты ҡапыл ғына өҫкә һикертеп, ым яһау. *Баҡса ҡыҙы, сирень араһынан, ҡаш һикертеп мине саҡырма!* Ғ. Хәйри. **Ҡаш тартыу** ҡаш ваҡ-ваҡ ҡына итеп дерелдәү. *Уңлап та ғына һуллап ҡашым тарта, ни булыр ҙа икән был башҡа* (Халыҡ йырынан).

**2.** Тәҙрә, ишек һымаҡ нәмәләрҙең өҫтөнә эске йәки тышҡы яҡтан буй ҡуйылған йоҡа таҡта; ҡашаға. *Ҡыйыҡ ҡашы. Мейес ҡашы.*

**3.** Эйәрҙең алдан һәм арттан дуғаланып ҡалҡып торған өлөшө. *Алғы ҡаш. Артҡы ҡаш. Көмөш ҡаш. Эйәр ҡашына тотоноп ултырыу.* ■ *Ҡаҙаҡтарҙың алдынан батыры килә, ти. Эйәренең ҡашы шундай ҙур булған, хатта батыр уҡ, һөңгөнән ышыҡланып килә, ти* (Легенданан). *Бүзәкәев кантон эйәренең алтынлатҡан икән уң ҡашын* (Халыҡ йырынан).

**4.** Йөҙөк, беләҙек, ҡаптырма кеүек нәмәләргә биҙәү өсөн ҡуйылған аҫыл таш йәки затлы металл киҫәге. *Аҡыҡ ҡаш. Беләҙек ҡашы. Йөҙөккә ҡаш ҡуйҙырыу.* ■ *Иң яҫы, үҙенән ҡаш сығарып һуғылған «Сафура» тип яҙылған ҡара биҙәкле йөҙөк Зәлифәгә тейҙе.* Һ. Дәүләтшина. *Алмас тимер менән яҙалар икән көмөш йөҙөктәрҙең ҡаштарын* (Халыҡ йырынан).

♦ **Аш биреп, ҡаш биреп тороу** *ҡар.* **аш**[1]. **Йөҙөк ҡашы урынына йөрөү** бик ҡәҙерле, хөрмәтле булыу. *Хәҙер Мырҙаш байыған, .. халыҡ алдында йөҙөк ҡашы урынына йөрөй.* Д. Юлтый. **Күҙ ҙә ҡаш [булып] көтөү** *диал.* дүрт күҙ менән көтөү (*ҡар.* **көтөү**[1]). **Күҙ менән ҡаш араһында** *ҡар.* **күҙ.** **Күҙ өҫтөндәге ҡаш кеүек** бик ҡәҙерле (кешегә ҡарата). **Ҡаш төҙәтәм тип күҙ сығарыу** бер эште эшләйем тип, икенсе эште боҙоу. *«Тормош»-та эшләй сәркәтип, ҡаш төҙәтәм тип, күҙ сығарып, барса эште тарҡатып.* Ш. Бабич. **Ҡашты емереү** (*йәки* **төйөү**) асыу, ризаһыҙлыҡ белдереп төҫтө боҙоу. *Асылы ҡул батшаһы борсолоп ирененән тешләй, ҡашын емерә.* «Аҡбуҙат».

● *Башлыҡ булһаң, башлы бул, йыйырылмаҫ ҡашлы бул.* Әйтем.

**ҠАШ**[2] *и.* Ян, эргә, ал. *Баҡса ҡашында. Өй ҡашында. Ҡыҙҙар ҡашына ултырыу.* ■ *Юҡты түгел, улым, ысын,— тине ҡарт,..— мин олатайҙар ҡашына китәм.* Б. Бикбай. *Төшөндә Буҙйегеттең ҡашына ҡырҡ ҡыҙ килгән.* «Буҙйегет».

● *Хан ҡашында ғәйебең булһа, ҡара ерҙән ҡайыҡ тарттырыр.* Мәҡәл.

**ҠАШ**[3] *и. диал.* Ҡашлаҡ.

**ҠАШАҒА** *и.* **1.** Усаҡ-мейестең ауыҙы өҫтөндәге һикәлтә. *Мейес ҡашағаһы. Усаҡ ҡашағаһы.* ■ *Ғәлимә еңгә мейес ҡашағаһынан уның [Фәтихтең] бейәләйҙәрен алып бирҙе.* Б. Ишемғол. *Шәриф усаҡ ҡашағаһында ятҡан шырпыны алды ла .. ишеккә йүнәлде.* З. Биишева.

**2.** *һөйл.* Өрләккә, мейес өҫтөнә буйлатып ҡорған тар шаршау. *Ҡашаға ҡороу.*

**3.** *диал.* Күлдәк-камзулдың итәгенә баҫҡан таҫма. *Ҡашаға баҫып тегеү.*

**4.** *диал. ҡар.* **ҡаш**[1] 2. *Ишек ҡашағаһы.* ■ *Тәҙрәләрҙең яңаҡтары, ҡашағалары, төптәре аҡ буяу менән буялған.* Ғ. Дәүләтшин.

**5.** *диал. ҡар.* **ҡаш**[1] 3. *Дәүләтбай теҙгенен бушатып, эйәр ҡашағаһына ятты. Һунарға йөрөп өйрәнгән башҡорт аты ҡуян артынан йомолдо.* Б. Хәсән.

**ҠАШАҒАЛАУ** *к.* Ҡашаға ҡуйыу, ҡашағалы итеү. *Ҡашағалап ҡороу. Мейесте ҡашағалап сығарыу.*

**ҠАШАЛДЫРЫҠ** *и.* Ҡалаҡ, ҡашыҡтарҙы теҙеп ҡыҫтырып ҡуя торған ҡулайлама.

**ҠАШАН** *с. диал.* Дыуамал.

**ҠАШАНДЫРЫУ** *к.* Кесе ярау иттереү (атты). *Атты оҙаҡ ҡашандырмай барһаң, бик ныҡ тирләүсән була.* Т. Морат.

**ҠАШАНЫУ** *к.* Кесе ярау итеү (атҡа ҡарата). *Яҡшы ат кирелеп ҡашана.*

**ҠАШАУ** *и. диал. ҡар.* **ҡырғыс** 1.

**ҠАШАЯҠ** *и. ҡар.* **ҡашығаяҡ.**

**ҠАШҠА** *и.* **1.** Хайуандарҙың маңлай уртаһындағы аҡ тап. *Ерән ҡашҡа. Ҡашҡаһы бар. Ҡашҡаһы ҙур. // Ҡашҡа ат. Ҡашҡа тәкә.* ■ *Үҫә-үҫә ҡашҡа быҙау ҡашҡа һыйыркай булыр.* Ғ. Амантай. *Маңлай өҫтөнән моронона ҡәҙәр аҡ ҡашҡаһы булғанға, беҙ уға [эткә] Ҡашҡар тип исем бирҙек.* С. Кулибай. *Ҡараңғы ла төндә юл яҡтыртҡан Салауат менгән кирҙең ҡашҡаһы* (Халыҡ йырынан). **Йондоҙ ҡашҡа** аттың маң-

лайындағы бәләкәй генә түңәрәк ҡашҡа һәм шундай ҡашҡалы ат. *Малай Йондоҙ ҡашҡаның юҡлығын белеп, йәһәт кенә эҙләргә сығып китә* (Әкиәттән). **Сыбай ҡашҡа** һыҙылып ҡына төшкән оҙон ҡашҡа. *Сыбай ғына ҡашҡа ҡырас ялын тауҙан ғына өргән ел тарай* (Халыҡ йырынан).

◆ **Ҡашҡа баш** *диал.* Ҡашҡалаҡ.

**ҠАШҠАЙТЫУ** *ҡ.* Ауыҙҙы ыржайтып тештәрҙе ныҡ күрһәтеү. *Әхсән .. тештәрен ҡашҡайтып көлөп, Нурйән янына килеп туҡтаны.* С. Кулибай.

**ҠАШҠАЙЫУ** *ҡ.* **1.** Тештәр ныҡ күренеү, ыржайып тороу. *Теше ҡашҡайып тора.*

**2.** *күсм.* Һерәйеп, ҙур булып күренеү. *Ағиҙелдең яры ҙур бер баҡса, һәйкәл тора унда ҡашҡайып.* К. Кинйәбулатова.

**ҠАШҠАЛАҠ** *и.*, **ҡашҡалаҡ өйрәк** Башында аҡ ҡашҡаһы булған оҙон текә муйынлы ҡара өйрәк.

**ҠАШҠАЛТАЙ** *и. диал.* Ҡашҡалаҡ өйрәк (*ҡар.* **ҡашҡалаҡ**).

**ҠАШҠАР** *и.* **1.** Бүре.

**2.** (*баш хәреф менән*) Эт исеме.

**ҠАШ-ҠАШЛАҠ** *и. диал.* Ҡашлаҡ.

**ҠАШЛАҠ** *и.* Һыу буйҙарындағы һөҙәкләнеп, үлән үҫеп бөткән иҫке яр; ҡалҡыулыҡ. *Текә ҡашлаҡ. Һөҙәк ҡашлаҡ. Ҡашлаҡ буйы. Ҡашлаҡҡа менеү.* ■ *[Хамматтар] Үле Эйек ҡашлағынан уҙған берләм юл буйлап ҡайтып баралар ине.* З. Биишева. *Яҙ һулышы менән донъя тулған, ҡашлаҡтарҙа ҡарҙар ирегән.* И. Әхмәтъянов.

**ҠАШЛАУ** [1] *ҡ.* **1.** Ҡаш [1] (4 мәғ.) ҡуйыу (йөҙөк-беләҙеккә).

**2.** Ҡаш [1] (3 мәғ.) яһап ҡуйыу (эйәргә). *Эйәрҙе ҡашлау.*

**ҠАШЛАУ** [2] *и. диал.* Ҡашлаҡ. *Ошондай яҙ көнө алалы-ҡолалы бер ҡашлауҙа ут яғып ултырыу балалар өсөн .. күңелле булыр ине.* Ғ. Ибраһимов.

**ҠАШЛАУ** [3] *и.* Йүгән маңлайсаһы.

**ҠАШЛЫ** *с.* Ҡашы [1] (1, 3, 4 мәғ.) бар, ҡаш ҡуйылған. *Аҡыҡ ҡашлы эйәр. Ҡашлы йөҙөк.* ■ *Фатима иҙеү эсенә тығылып, гәүһәр ҡашлы алтын ике алҡа килтереп сығарҙы.* Б. Бикбай.

**ҠАШМАУ** *и.* Ҡатын-ҡыҙҙың мәрйен теҙеп, тәңкә-сулпы баҫып, оҙон яҫы ҡойроҡ төшөрөп эшләгән боронғо баш кейеме. *Ҡашмау ҡойроғо. Ҡашмау кейеү.* ■ *Һөйлә [ҡурай] ҡашмау кейеп, селтәр бәйләп, ҡырҙа йырлап йөрөгән һылыуҙы.* Ш. Бабич. **Тупый ҡашмау** түбәһен ябыҡ итеп эшләгән ҡашмау. *Тупый ҡашмау кеймәҫ наҙ инем, сүрәкә генә кейеп йөрөймөн.* «Ҡара юрға».

**ҠАШУҠА** *и.* Ҡатын-ҡыҙҙың маңлайға ҡуйыу өсөн уҡа-мәрйендән биҙәп яһаған таҫмаһы.

**ҠАШШАҠЛАНЫУ** *ҡ. диал.* Кеҙеләнеү.

**ҠАШЫҒАЯҠ** *и. йыйн.* Аш-һыу әҙерләү һәм ашау-эсеү өсөн ҡулланылған һауыт-һаба. *Ҡашығаяҡ шкафы.* ■ *Сәй эсеп бөткәс [Кәримә:] — Әсәй, ятып ял ит. Ҡашығаяҡты үҙем йыйыштырырмын..* Н. Мусин.

◆ **Ҡашығаяҡ шалтырамай булмай** (*йәки* **тормай**) ғаиләлә һәр саҡ тыныс булмай, әҙ-мәҙ генә булған тауыш, тартышҡа ҙур иғтибар бирергә ярамай тигән мәғәнәлә әйтелә. *Кешеләрҙең күбеһе ғаилә тормошоноң тәүге айҙарын күңелле үткәрәләр. Һуңынан ара-тирә ҡашығаяҡ шалтырамай булмай.* Ш. Шәһәр. **Ҡашығаяҡ яғы өйҙөң** аш бешереү, аш-һыу әҙерләй торған яғы; түрбаш. *Ә өйҙөң эсе шундай матур,.. ҡашығаяҡ менән оло яҡ араһына ҡыҙыл-зәңгәр шаҡмаҡлы шаршау ҡоролған.* Ф. Рәхимғолова.

**ҠАШЫҠ** *и.* **1.** Аш һоҫа торған оҙон һаплы ҙур ҡалаҡ. *Ағас ҡашыҡ. Семәрле ҡашыҡ. Ҡашыҡ яһаусы. Ҡашыҡ менән аш һалыу.* ■ *Көмөш кенә ҡашыҡ, һабы нәҙек, тотмаһана ҡулың бешерер* (Халыҡ йырынан).

**2.** Һарыған ҡорт күсен һоҫоп алыу өсөн туҙҙан, ағастан яһаған ҙур ҡалаҡ. *Ул [Баһау] билгауына моҙға элде, ҡулына ҙур ҡашыҡ алды. .. Моҙғаны ботаҡҡа элде лә, күсте шуның эсенә ҡашыҡ менән һоҫоп төшөрә башланы.* Ж. Кейекбаев.

**3.** *диал.* Ҡалаҡ.

◆ **Ҡашыҡ ауыҙ** *ҡар.* **ауыҙ. Ҡашыҡ сумары** *диал. ҡар.* **сумар** [1].

**ҠАШЫҠ-АЯҠ** *и. диал.* Ҡашығаяҡ.

**ҠАШЫҠБАШ** *и. диал.* Ҡашыҡморон.

**ҠАШЫҠЛЫҠ** *и. диал.* Ҡашалдырыҡ; ҡыҫтырғыс.

**ҠАШЫҠМОРОН** *и. шул уҡ* **ҡашыҡ морон өйрәк** (*ҡар.* **өйрәк** 1).

**ҠАШЫҠ-ТАБАҠ** *и. йыйн. диал.* Ҡашығаяҡ.

**ҠАШЫЛДЫРЫҠ** *и. диал.* Ҡашалдырыҡ.

**ҠАШЫУ** *ҡ. диал. ҡар.* **тырнау** 1.

**ҠАЯ** *и.* Тауҙа сусайып сығып торған осло текә, ҙур, бейек таш. *Ҡая башы. Ҡая бите. Ҡая түбәһе. Ҡаяға менеү. Ҡаяға үрмәләү. // Ҡая таш.* ■ *Урал тауҙары ҡая таш, сал бөркөттәр өсөн ояға.* Салауат Юлаев. *Йырҙар яҙҙым Урал ҡаяһына* (Халыҡ йырынан).

**ҠАЯҘ** *и.* **1.** Туҙҙан яһаған ҡапҡасһыҙ һауыт (емеш-еләк тиреү өсөн).

**2.** *диал.* Моҙға.

**ҠАЯЛЫҠ** *и.* Ҡаялы урын, ҡаялар булған ер. *Иҙел буйҙары ай ҡаялыҡ, полковник Тәфтиләү яу урыны* (Халыҡ йырынан).

**ҠАЯЛЫУ** *ҡ. диал.* Күбеү, ташыу. *Сәйҙән эс ҡаялып китте.*

**ҠАЯСАЙ** *и.* Ҡыҙыл кәрзин сәскәле, телгеләнгән япраҡлы болон үләне.

**ҠАЯУ** [1] *и.* Һауыт-һабаға һалынған ҡоршау. *Ҡаяулы туҫтаҡ.* ■ *Өҫтәл өҫкәйендә өс сынаяҡ, ун ике лә ерҙән ҡаяулы* (Халыҡ йырынан).

**ҠАЯУ** [2] *и.* **1.** Саға торған төрлө бөжәк, ҡорт, йылан-саяндың ағыулы сәнскесе. *Йылан ҡаяуы. Ҡарағорт ҡаяуы. Саян ҡаяуы. Ҡорттоң ҡаяуын алыу.* ■ *Бал ҡорттарының ҡаяуы берәү генә. Улар саҡҡас оҙаҡ тормай үлә.* Ф. Иҫәнғолов.

**2.** *күсм.* Зәһәрле нәмә; сәнскес. *Үлем тере! Үлем сағып йөрөй, һәр кемгә лә етә ҡаяуы.* Р. Ғарипов.

**ҠЕҮӘ** [*ғәр.*] *и.* Көс, һәләт. *Аҡыл ҡеүәһе. Һүҙ ҡеүәһе. Шахмат кешелә фекер ҡеүәһен үҫтерә, уйлау һәләтен арттыра.*

**ҠЕҮӘТ** [*ғәр.*] *и.* **1.** Кешенең физик эш, хәрәкәт яһау һәләте, эш башҡарыу мөмкинлеге; ғәйрәт, ҡөҙрәт. *Ҡеүәте бар. Ҡеүәте юҡ. Ҡеүәт алыу. Ҡеүәт бөтөү.* ■ *Ҡеүәтенә совет һалдатының нисә тапҡыр донъя таң ҡалды.* С. Әлибаев.

**2.** Эш башҡарыу һәм эшләп сығарыу мөмкинлеге. *Заводтың ҡеүәте.*

**3.** *күсм.* Ҙур промышленность объекты (завод, машина һ. б.).

**4.** Ниндәйҙер ижтимағи күренештең, ил, йәмғиәт һ. б. көсө. *Хәрби ҡеүәт. Экономик ҡеүәт. Хужалыҡтың ҡеүәте.* ■ *Башҡортостан электр станцияһының ҡеүәте хәҙер миллиондарса киловатт менән иҫәпләнә.* Ә. Байрамов.

♦ **Ҡеүәт биреү** кемдеңдер һүҙен, эшен хуплап дәртләндереү; йөпләү. *Ҡанышбикә бейергә төшә. Аллабирҙе: «Һайт, маладсина, һайт маладсина»,— тип ҡул сабып, аяғын тыпылдатып, ҡеүәт биреп тора.* Ш. Биҡҡол.

**ҠЕҮӘТЛЕ** *с.* **1.** Физик яҡтан ныҡ, көслө; көҙрәтле. *Ҡеүәтле кеше. Ҡеүәтле булыу.*

**2.** Эш башҡарыу, эшләп сығарыу мөмкинлеге ҙур. *Ҡеүәтле завод. Ҡеүәтле йөрөткөс ракеталар.*

**3.** *күсм.* Ҙур ижтимағи көскә эйә булған (ойошма, ил, дәүләт һ. б. ҡарата). *Ҡеүәтле ил. Ҡеүәтле дәүләт.*

**4.** *һөйл.* Тәьҫир итеү мөмкинлеге көслө, ныҡ. *Ҡеүәтле бал. Ҡеүәтле дарыу.* ■ *Бабайҙың ҡымыҙы ҡеүәтле, эстеңме — тел көрмәлә.* С. Кулибай.

**ҠЕҮӘТЛӘНДЕРЕҮ** *ҡ.* Кемдеңдер һүҙен, эшен хуплап дәртләндереү; йөпләү. *Ырымбурҙан Ҡоломбәт мырҙа Өфөгә килеп, генерал указын ҡеүәтләндереп, старшиналарға бойорҙо.* «Батыршаның хаты».

**ҠЕҮӘТЛӘНЕҮ** *ҡ.* **1.** Ҡеүәте артыу, көсләнеү.

**2.** Ҡеүәт алыу, дәртләнеү. *Ҡеүәтләнеп эшләү.*

**ҠЕҮӘТЛӘҮ** *ҡ.* Нимәгәлер ыңғай мөнәсәбәт белдереү; көс биреү; йөпләү. *Кешенең эшен ҡеүәтләү. Һүҙҙе ҡеүәтләү.* ■ *Йәштәр .. председателдең күңелен табырға тырышҡандай: — Һай-һай .. Ана шулай, арттырырға булмаҫмы, тип ҡеүәтләп ултырҙылар.* М. Тажи.

**ҠЕҮӘТҺЕҘ** *с.* Ҡеүәте әҙ, ҡеүәте юҡ. *Ҡеүәтһеҙ машина. Ҡеүәтһеҙ дәүләт. Ҡеүәтһеҙ дарыу.*

**ҠЕҮӘТҺЕҘЛӘНЕҮ** *ҡ.* Көсһөҙ, ҡеүәтһеҙгә әйләнеү. *[Егет] бер шешәнең һыуын эсһә, ҡеүәтһеҙләнә, икенсеһен эсһә, бик ҙур ҡеүәт алғандай була* (Әкиәттән).

**ҠИБЛА** [*ғәр.*] *и.* **1.** Намаҙ уҡығанда йөҙ менән торған тараф; Мәккәгә ҡараған яҡ. *Ҡайһы бер кеше ҡиблаға ҡаршы ултырып зекер әйтә, йәғни тәсбих тарта.* М. Ғафури.

**2.** Көньяҡ яҡ. *Ҡибла еле. // Ҡибла яҡ.* ■ *Ҡибланан сыҡҡан эҫе ел ямғырға һыуһаған ҡайын япраҡтарын ҡурҙы.* Я. Хамматов. *Һаҡмар һыуы аға ҡибла табан, Урал тауы буйлап көн битләп* (Халыҡ йырынан).

♦ **Дүрт яғың ҡибла** үҙ иркеңдә, теләһәң ҡайҙа китергә мөмкин тигән мәғәнәлә әйтелә. *[Түҙемгол:] Әбей, хәҙер һинең дүрт яғың ҡибла. Ошо болотка ултырып, теләгән ереңә кит* (Әкиәттән).

**ҠИБЛАНМА** *и. иҫк.* Компас.

**ҠИҒБАТУЛЛА** [*ғәр.*] *и. иҫк.* Стенаға элеү өсөн доғалыҡтар яҙып, мәсет һүрәте төшөрөлгән рәсем; ҡәғбә мәсетенең рәсеме.

**ҠИҒЫРЛАҠ** *и. диал.* Боғарлаҡ.

**ҠИҠ** *оҡш.* Ҡапыл ҡыҫҡырып ебәргән ҡошҡаҙ-тауыҡ тауышын белдергән һүҙ. *Ҡиҡ-ҡиҡ итеү.*

**ҠИҠРАЙЫУ** *ҡ.* Башты сөйөп түште киреү; ҡуҡрайыу. *Ҡиҡрайып ултырыу.*

**ҠИҠЫЛДАУ** *ҡ.* Ҡиҡ-ҡиҡ итеү, ҡиҡ-ҡиҡ килеү. *Бәпкә ҡиҡылдап барып, төркөмгә ҡушылды.* Ж. Кейекбаев.

**ҠИЛЛӘТ** [*ғәр.*] *и. иҫк.* Етешһеҙлек, юҡлыҡ. *Дәртһеҙҙәрҙең эше юҡ һиммәт менән, һиммәтленең ҡулы ҡыҫҡа ҡилләт менән.* Аҡмулла.

**ҠИММӘТ** [*ғәр.*] *с.* **1.** Юғары баһалы, хаҡы ҙур; ҡыйбат; *киреһе* осһоҙ, арзан. *Ҡиммәт хаҡ. Ҡиммәт нәмә. Ҡиммәт тауар. // Хаҡты ҡиммәт алыу. Нәмәне ҡиммәт һатыу. Ҡиммәткә алыу. Ҡиммәткә һатыу.* ■ *Элек осар тейен былай тейенгә ҡарағанда ҡуберәк ине .. тиреһе ҡиммәт түгел, осһоҙ.* Я. Хамматов. *Петербургтан килгән ай мәрмәр таш баһалары ҡиммәт, [үҙе] ҙур түгел* (Халыҡ йырынан).

**2.** Тотҡан әһәмиәте ҙур, баһалы, ҡәҙерле. *Ҡиммәт булыу.* ■ *Айбулаттың кәләш алыу-алмауында бер зыян да, файҙа ла юҡ. Тик бына ир намыҫы ҡиммәт.* Һ. Дәүләтшина. .. *Оләсәй, һаулығыңды һаҡла, бирешмә. Беҙ уҡып сыҡҡас, үҙеңде түргә ултыртып, ҡәҙерләп йәшәтербеҙ,— тиҙәр. Ейәнсәйҙәремдең яҡшы һүҙе ҡиммәт.* З. Биишева. .. *Насар ҡараш ташлаһа ла .. шағир өсөн ҡиммәт улар, геройҙары уға яҡындар.* Ғ. Сәләм.

**3.** *и. мәғ.* Нимәнеңдер тотҡан әһәмиәте, мөһимлеге. *Ҡиммәте ҙур. Ҡиммәте юҡ. Әҫәрҙең художество ҡиммәте.*

**4.** *и. мәғ. эк.* Тауар етештереү өсөн билдәле бер кимәлдә сарыф ителгән һәм шул тауарҙа әйберләштерелгән ижтимағи хеҙмәт. *Ҡиммәт законы.* ■ *Хаҡ,— тип яҙған В. И. Ленин,— ҡиммәт законының сағылышы ул. Ҡиммәт — хаҡтар законы, йәғни хаҡтың дөйөмләштерелгән кәүҙәләнеше.* «Совет Башҡортостаны», 1966, 16 ғинуар.

♦ **Алмашыу ҡиммәте** *эк.* ҡиммәтле ҡағыҙҙарҙың, аҡсаның үҙендә күрһәтелгән хаҡ. **Ҡулланыу ҡиммәте** *эк.* берәй нәмәнең, тауарҙың кешенең ниндәйҙер ихтыяжын ҡәнәғәтләндерә алыу һәләте, кәрәклеге. *Кешенең теге йәки был ихтыяжын ҡәнәғәтләндереү үҙенсәлеге тауарҙың ҡулланыу ҡиммәте тип атала.* «Совет Башҡортостаны», 1968, 25 октябрь. **Өҫтәмә ҡиммәт** *эк.* капиталистик йәмғиәттә тауар хаҡының эшселәргә түләгән эш хаҡынан тыш файҙаға ҡалған, капиталистар тарафынан үҙләштерелә торған өлөшө. *Өҫтәмә ҡиммәт тураһында тәғлимәт.*

● *Алтын үҙенең төҫөн үҙгәртмәгәне өсөн ҡиммәт.* Әйтем. *Арзандың бер сәбәбе, ҡиммәттең бер хикмәте була.* Әйтем. *Боландың мөгөҙө, ғалимдың һүҙе, филдең теше, оҫтаның эше ҡиммәт.* Әйтем. *Ҡыҙыл йомортҡа көнөндә ҡиммәт.* Мәҡәл.

**ҠИММӘТЛЕ** *с.* **1.** Юғары хаҡлы; баһалы, ҡыйбатлы. *Ҡиммәтле кейем. Ҡиммәтле йыһаздар.* ■ *Элегерәк ҡамсат ҡондоҙоноң тиреһе донъяла иң ҡиммәтле йәнлек тиреһе һаналған.* Ж. Кейекбаев.

**2.** Әһәмиәте ҙур, ҡәҙерле. *Ҡиммәтле яҙма ҡомартҡы.* ■ *Мин хайранмын ҡиңлегеңә Баш-*

*ҡортостаным — илем! .. Бар хазинаңдан ҡиммәтле бәхетле халҡың һинең!* М. Кәрим.

**ҠИММӘТЛӘНДЕРЕҮ** *ҡ.* Ҡиммәткә (1 мәғ.) әйләндереү, ҡиммәтле итеү; ҡыйбатландырыу. *Тауарҙың хаҡын ҡиммәтләндереү.*

**ҠИММӘТЛӘНЕҮ** *ҡ.* Ҡиммәткә (1 мәғ.) әйләнеү; ҡиммәт булыу, ҡыйбатланыу. *Ҡиммәтләнеп китеү.*

**ҠИММӘТСЕЛ** *с. һөйл.* Ҡиммәт хаҡ һораусан. *Ҡиммәтсел кеше.*

**ҠИММӘТСЕЛЕК** *и.* Нәмә хаҡының күтәренкелеге. *Ҡиммәтселек булыу. Ҡиммәтселек көсәйеү.*

**ҠИНАЛЫУ** *ҡ. диал. ҡар.* **ҡыланыу** 3.

**ҠИРАӘТ** [*ғәр.*] *и. иҫк.* Кемдеңдер бер нәмәне ҡысҡырып ятҡа уҡыуы. *Ул мулланың ҡираәте яҡшы булһын, күргән тип мулла йәләл, ҡотормағыҙ.* Аҡмулла.

**ҠИРАӘТХАНА** [*ғәр. + фарс.*] *и. иҫк.* Уҡыу бүлмәһе, уҡыу өйө. *Халыҡты ағартыу юлында губерна һәм өйәҙ земстволары ауыл ерҙәрендә ҡираәтханалар, китапханалар аса.* М. Ғафури.

**ҠИСАҒАС** *и. диал.* Тәртешкә.

**ҠИСАС** [*ғәр.*] *и. иҫк. кит.* Үс, ҡон. *Аң менән уйнаусыларға бик тейешлеләр ҡисас.* Ш. Бабич.

**ҠИСЕМ** [*ғәр.*] *и. иҫк. кит.* Бүлек, өлөш. *Кинәт марштың күтәренке ҡисеме яңғыраны. Мин һиҫкәнеп киттем.* И. Насыри. *[Мулла:] Әфәндекәйҙәрем, мәктәптәрҙә уҡытыу эшен ҡарарға уйлайбыҙ икән, уны ике ҡисемгә айырып ҡарайыҡ.* А. Таһиров.

**ҠИСМӘТ** [*ғәр.*] *и. иҫк.* **1.** Яҙмыш, тәҡдир. *Ризабыҙ, ҡисмәтең беҙгә бүлемле: наҙандар маллы, әммә беҙ белемле.* Ш. Бабич. *Беләм инде ябыҡ төҫтәреңдән һалҡын ҡисмәт һине иҙгәнен.* Х. Ғәбитов.

**2.** Өлөш. *Рәхимле шаһыбыҙ Павел Петров .. сәләхиәт менән һәр ҡайһыларыбыҙға ерҙәребеҙҙе, һыуҙарыбыҙҙы һәм урмандарыбыҙҙы ҡисмәт итеп алырға мәрхәмәт итеп землемерҙар ебәрҙе.* «Башҡорт шәжәрәләре», 1960.

**ҠИССА** (ғәр.) *и.* **1.** Ниндәйҙер бер тарихи ваҡиға йәки шәхес тураһында хикәйәт. *Йософ вә Зөләйха ҡиссаһы. Ҡисса тыңлау.* ■ *Ҡартинәйем ауыҙынан ишеткән әкиәттәрҙе, ҡиссаларҙы ла онота алмайым.* К. Мәргән.

**2.** Шул тарихты тасуирлаған художестволы әҫәр, хикәйә. *Ҡисса һөйләү.* ■ *Әхмәтйән ҡоҙаның шаҡ ҡатырғыс тылсымлы әкиәттәре, ҡиссалары, күрәһең, күп булғандыр.* С. Кулибай.

**3.** *дини* Пәйғәмбәрҙәр, дин әһелдәре тормошо тураһындағы фантастик хикәйә, риүәйәт, легенда. *Ҡисса яҙыу.* ■ *Уҡыталар ине ул ваҡытта төрлө пәйғәмбәрҙәр ҡиссаһын.* М. Ғафури.

**4.** Ғибрәтле хикәйә, өгөт, нәсихәт. *Һәр төрлө мәғәнә менән ҡисса яҙҙым.* Аҡмулла.

□ **Ҡисса ҡылыу** хикәйә итеү, хикәйәләү. *Ғәйепһеҙ эш булмай, ти, хаҡтин уҙгә, ҡисса ҡылып яҙған булдым быны һеҙгә* (Хикәйәттән).

**ҠИТАР** *с. диал.* Өркәк. *Ҡитар мал.*

**ҠИТҒА** [*ғәр.*] *и.* **1.** Диңгеҙ һәм океандар менән уратып алынған ерҙең айырым бер ҙур өлөшө; континент, материк. *Донъяның төрлө ҡитғалары. Ҡитғаларҙы гиҙеү.* ■ *Миәс аша донъяның ике ҡитғаһын — Европа менән Азияны бергә тоташтырып, бөйөк тимер юлы үтә.* Р. Шәкүр. *Бер аяғы менән Европаға, икенсеһе менән Азия ҡитғаһына баҫып тора .. Совет Башҡортостаны.* Ғ. Әмири. *Һәр көн арта беҙҙең дуҫтар был тығыҙ сафта, Ерҙең бөгөн биш ҡитғаһы сыға парадҡа.* М. Сөндөклө.

**2.** *әҙ.* Тулы бер фекер әйтелгән ике-өс юллыҡ шиғыр. *1914 йылдан алып «Шура» журналында Шәйехзада Бабич ҡитғаларын уҡый башланым.* С. Ҡудаш.

**ҠИҺЫТЛЫҠ** *и. диал.* Ҡытлыҡ.

**ҠИӘМӘТ** [*ғәр.*] *и.* **1.** Дини тәғлимәт буйынса, донъя бөтөп, ахыр заман еткәс, сыуалыш ҡубып, үлектәр терелгәс, алла тарафынан уларға хөкөм үткәрелә торған ҡурҡыныс көн. *Ҡиәмәт көнө. Ҡиәмәт етеү. Ҡиәмәт ҡубыу.* ■ *[Мулла:] .. Ҡиәмәт көнөндә тамуҡ ғазаптарына риза булмайынса .. ожмахлы булғығыҙ килһә, хөкүмәтебеҙгә итәғәтле булығыҙ.* Х. Ибраһимов.

**2.** Хөрәфәт буйынса, үлгәс йәшәй торған донъя; әхирәт, теге донъя. *[Мулла:] Балам, инде әсәйеңде бында күрә алмабыҙ, унда барғас күрербеҙ. Ул ҡиәмәт беҙҙең үлгәс барып бергә күрешә торған ер.* М. Ғафури. *Йорто, малы ҡиәмәттә түгел, был донъяла кәрәк.* М. Кәрим.

**3.** *күсм.* Шау-шыу, тауыш, ғауға, сыуалыш. *Ҡиәмәт ҡуптарыу.* ■ *[Тимеркәй:] Эш тә эш! Байға ярап булмай. Әҙ генә яуаплашһаң, ҡиәмәт ҡуба.* Д. Юлтый. *Ун биш тракторист барып МТС-ҡа бер юлы ете трактор алып ҡайтты. Бөтә юл буйы геүелдәп, яңғырап торҙо ул көнө. Ҡиәмәт ҡупҡан тиерһең.* К. Мәргән.

**ҠИӘМӘТЛЕК** *с. ҡар.* **морондоҡ**[3]. *Ҡиәмәтлек әсәй. Ҡиәмәтлек ҡыҙ. Ҡиәмәтлек атай. Ҡиәмәтлек ҡыҙ яһау.* ■ *Үҙе яратып ҡиәмәтлек ҡыҙы иткән ошо илгәҙәк баланың уҙ ҡаны түгеллеген ул [Гөлйөҙөм] инде бөтөнләй оноtҡан.* Ф. Иҫәнғолов.

**ҠИӘФӘТ** [*ғәр.*] *и.* Кешенең тышҡы күренеше, килеш-килбәте, төҫ-сырайы. *Атайым асыулы төҫ менән ҡайтып инде. Уның был ҡиәфәттә ҡайтҡанын мин тәүгә күрә инем.* Д. Юлтый. *Бер кеше килгән. Ҡиәфәтенә ҡарағанда далала йәшәгән бер .. ҡаҙаҡ булырға кәрәк.* И. Көҫәпҡол. *Батша атынан төшөп, әбей ҡиәфәтенә ингән ҡыҙын тотоп алған* (Әкиәттән).

**ҠИӘФӘТЛЕ** *с.* Төҫ-башы, килбәте матур; күркәм. *Ҡиәфәтле кеше.*

**ҠИӘФӘТҺЕҘ** *с.* Төҫ-башы, килбәте яман; йәмһеҙ, күрмәлекһеҙ. *Ҡиәфәтһеҙ кеше.*

**ҠОБА**[1] *с.* Салт асыҡ булмаған, аҡһылланып, көлһыуланып торған аҡһыл һары, аҡһыл ҡыҙыл, аҡһыл ҡара һ. б. төрлө төҫ (хайуан төҫөнә ҡарата). *Ҡоба һыйыр. Ҡоба ат. Ҡоба ҡош.* ■ *[Күршенең] ҡоба һыйыры уҫал да инде, бөтә көтөүҙе айҡап йөрөй.* Ғ. Ғүмәр. **Аҡ ҡоба** 1) асыҡ ҡоба. *Аҡ ҡоба ат*; 2) *күсм.* матур, асыҡ аҡ (йөҙгә ҡарата). *Ул [Зәлифә] аҡ ҡоба алһыу битле, .. ҡуңыр ҡашлы..* Һ. Дәүләтшина.

◆ **Ҡоба ҡаҙ** *ҡар.* **ҡаҙ 1. Ҡоба тал** *ҡар.* **тал.**

**ҠОБА**[2] *с.* Бер ниндәй йәшел үҫемлек булмаған, буп-буш асыҡ ятҡан; ҡола. *Ҡоба сул.* ■ *Бушлыҡ булған ҡоба далала бөгөн тормош шаулай.* А. Игебаев.

**ҠОБА**[3] *с.* Иләнмәгән, эшкәртелмәгән, ирек-

лэнмэгэн, ҡаты (күнгэ, тирегэ ҡарата). *Ҡоба көн. Ҡоба итек. Ҡоба сарыҡ.*

**ҠОБАҒАУ** *и. диал.* Юл өҙөлгэн ваҡыт.

**ҠОБАЙЫР** *и.* Берэй мөһим тарихи ваҡиғаға йэки батырҙарҙы данлауға бағышланған боронғо шиғри эҫэр; көйһөҙ йыр. *Ҡобайыр эйтеү.* ■ *Башҡорт халыҡ поэзияһындағы боронғо һэм иң тәүге эпик жанрҙарҙың береһе — ҡобайыр.* Ғ. Хөсәйенов. *Ҡобайырҙарҙы халыҡ сэсэндэре сығарған һэм үҙ-ара ярышып, байрамдарҙа, уйындарҙа, һабантуйҙарҙа башҡара торған булғандар.* К. Әхмәтйәнов.

**ҠОБАЙЫРСЫ** *и.* Ҡобайыр эйткэн сэсэн, ҡобайыр эйтеүсе. *Борон йыйындар, ҙур мэжлестэр, төрлө туйҙар, гэҙэттэ, ҡобайырсыларҙың һүҙ оҫталығын һынай торған урын булған.* Ә. Харисов.

**ҠОБАҠ** *с. диал.* Буръяҡ. *Ҡобаҡ һыу.*

**ҠОБАҠҺЫУ** *ҡ. диал. ҡар.* **ҡабығыу** 1. *Ҡобаҡһыған бесэн.*

**ҠОБАН** [*рус.* кубанка]: **ҡобан бойҙай** ҡылсыҡлы, эре, ҡаты бер бойҙай төрө.

**ҠОБАРА** *и.* Кеше йөҙөнөң ғэҙэттэге төҫө. *Ҡобараһы юҡ.* **Ҡобараһы осоу** йөҙҙөң ғэҙэттэге төҫө үҙгэреп, төҫһөҙ булып, ҡоба [1] төҫлө ағарынып китеү. *Ҡобараһы осоп, үлек төҫөнә ингэн өлэсэһе диванда башын артҡа ташлап .. ултыра.* Х. Мохтар.

**ҠОБАРТЫУ** *ҡ. йөкм. ҡар.* **ҡобарыу.** *Йөҙҙө ҡобартыу.*

**ҠОБАРЫУ** *ҡ.* **1.** Йөҙҙөң ғэҙэттэге төҫө юғалыу, ағарыныу; ҡобара осоу. *Тимербай ағай ҙа бер ҡыҙарҙы, бер ҡобарҙы. Башын түбэн баҫып, урағын көлтэ өҫтөнэ һалды.* Һ. Дәүләтшина.

**2.** Төҫһөҙгэ, ҡобаға [2] эйлэнеү. *Урмандағы күҙҙең яуын алып торған йэшеллектэр, бөҙрэ япраҡтар урынына кипкэн һуҡталары ғына ҡалып, тимгел-тимгел ҡобарып тора.* Ғ. Дәүләтшин.

**ҠОББӘ** [*ғәр.*] *и. иҫк. кит.* Көмбэҙ. *Күренэ күҙгэ ҡоббэ, михрабында илһамдар тулы.* Х. Ғэбитов.

**ҠОДЕС** [*ғәр.*] *и. иҫк. кит.* Изгелек. *Һиндэ күрҙем, һиндэ таптым милли ҡодес.* Х. Ғэбитов.

**ҠОДУСИ** [*ғәр.*] *с. иҫк. кит.* Изге, саф. *Әҙлэйем ҡодуси аҡлыҡ сэскэлэрҙэ, уларҙа ла кер һэм тап күрэм.* Б. Мирзанов.

**ҠОҘА** *и.* **1.** Өйлэнешкэн ҡыҙ менэн егеттең йэки ир менэн ҡатындың аталары һэм ир туғандары (бер-береһенэ ҡарата). *Бэлэкэй ҡоҙа. Оло ҡоҙа. Бер туған ҡоҙа.* // *Ҡоҙа кеше. Ҡоҙа булыу. Ҡоҙа итеү.* ■ *Гөлйөҙөм касып китэ торған булһа, никах ҡылырға торған кейэү алдына, ҡоҙалар ҡаршыһына ни битең менэн сыкмаҡ кэрэк.* Һ. Дәүләтшина. *Беҙҙең ҡоҙа хэлле икэн, йыуасаһы баллы икэн* (Туй йырынан). / Өйлэнешкэн ҡатын-ҡыҙ һэм ир-аттың ир туғандары һэм ауылдаштары (бер-береһенэ ҡарата). *Уларҙы Үмэр бүлде: — Әле шуны һөйлэп ултырабыҙ, донъяла дөрөҫлөк тигэн нэмэнең эҫэре лэ ҡалмай бара бит.— Ниңэ улай тиһең ҡоҙа? — тип һораны Ҡотлояр.* Һ. Дәүләтшина. **Баш ҡоҙа** туйҙа ҡыҙҙың йэ егеттең атаһы йэки уны алмаштырған башҡа бер оло ир кеше. *Баш ҡоҙа булып барыу.* **Төп ҡоҙа** *ҡар.* **баш ҡоҙа.** *Егет яғынан 10-20 ҡоҙағыйлы ҡунаҡ килэ. Төп ҡоҙаға барып төшэлэр. Атты малайҙар йөрөтөргэ алып китэ. Уйнатып, саптырып өй һайын ҡоҙаларҙы тараталар. Төп ҡоҙа тэүге ашҡа ала* (Туй йолаһынан). **Ҡоҙа атҡарыу** туйға килгэн ҡоҙаларҙы ҡэҙерлэп һыйлау; туй үткэреү. **Ҡоҙа булышыу** ҡыҙ алып йэки ҡыҙ биреп туғанлашыу. *Бөтэ халыҡ алдында Күсмэҫ хан менэн Күсэр хан .. үҙҙэренең ҡоҙа булышырға ҡуйған вэғэҙэлэрен дэ эйттелэр ти.* «Ҡуҙыйкүрпэс менэн Маянһылыу».

**2.** Улына кэлэш эйттерергэ, ҡыҙ ҡоҙалап һоратырға килгэн кеше (ғэҙэттэ, егеттең атаһы килергэ тейеш булған). *Ҡоҙа булып килеү. Ҡоҙа килеү.* ■ *«Бына ҡыҙыбыҙ Хөмэйрэгэ ҡоҙа килеү менэн эйэле-башлы итер инек, үҙебеҙгэ тиң ырыуҙан ҡоҙа килмэй»,— тип сөңкөлдэй башланы* [эсэһе]. Т. Хэйбуллин. *Бурҙат та шаршау бауы таҫма, һин бэйлэнең уны, еңгэкэй. Килер ҙэ кайтыр ине ҡоҙа, һин димлэнең уны, еңгэкэй* (Сеңлэүҙэн).

● *Алыҫ ергэ ҡоҙа булһаң, арта-арта аш килер, яҡын ергэ ҡоҙа булһаң, арта-арта һүҙ килер.* Мәҡәл. *Ҡапҡа алдына ҡоҙа килһэ, ҡабам менэн орсоғом.* Әйтем. *Ҡоҙа булғансы ныҡ һөйлэш, ҡоҙа булғас ныҡ һыйлаш.* Мәҡәл. *Эт менэн ҡоҙа булһаң, һөйэк менэн туй итэрһең.* Әйтем. *Эттең бажаһы күп, ҡоҙаһы юҡ.* Әйтем.

**ҠОҘАҒЫЙ** *и.* Өйлэнешкэн ҡыҙ менэн егеттең йэки ир менэн ҡатындың эсэлэре һэм оло ҡатын-ҡыҙ туғандары (бер-береһенэ һэм башҡа туғандарына ҡарата). *Оло ҡоҙағый. Ҡоҙағый булыу.* ■ *Шул ваҡыт ҡоҙағыйҙарҙың береһе йыуаса икмэген һалған тоҡсайын йөкмэп бейей башланы* (Туй йолаһынан). *Тоҡтоң ауыҙын сисэйек, йыуасаһын сэсэйек, ҡоҙағыйҙың күңеле булһын, бөтөргэнсэ эсэйек* (Туй йырынан). // Өйлэнешкэн ир-ат һэм ҡатын-ҡыҙҙың оло ҡатын-ҡыҙ туғандары һэм ауылдаштары (бер-береһенэ ҡарата).— *Ҡана, Сэғиҙэ ҡоҙағый, икэүлэп күсерэйек. Әбей уның [Мэғфүрэнең] был ярҙамына ҡаршы килмэне.* Һ. Дәүләтшина. **Төп ҡоҙағый** туйҙа ҡыҙҙың йэ егеттең эсэһе йэки уны алмаштырған башҡа бер оло ҡатын. *Туйҙа төп ҡоҙағый йыртыш өлэшэ.*

♦ **Юҡтан ҡоҙағый** бер насарыраҡ нэмэне ирекһеҙҙэн бар һанына йөрөткэндэ эйтелэ. *Һыу башняһы менэн электростанция будкаһы, атайым эйтмешлэй, юҡтан ҡоҙағый, мөмкинлек булмағандан эшлэнгэн ваҡытлы нэмэ.* И. Ғиззэтуллин.

● *Ҡоҙа ашы мул булһа, ҡоҙағый йомарт була.* Мәҡәл.

**ҠОҘА-ҠОҘАҒЫЙ** *и. йыйн.* Ҡоҙалар һэм ҡоҙағыйҙар, ҡоҙа-ҡоҙағый туғандар. *[Сабира:] билде биштэн быуып, ҡоҙа-ҡоҙағыйҙарҙы һыйларбыҙ.* Һ. Дәүләтшина.

**ҠОҘА-ҠОҘАҒЫЙЛЫҠ** *и.* **1.** Ҡоҙа-ҡоҙағыйҙар араһында туғанлыҡ мөнэсэбэте.

**2.** *күсм. һөйл.* Танышлыҡ-туғанлыҡҡа ҡоролған мөнэсэбэт. *Ҡоҙа-ҡоҙағыйлыҡ аша эшкэ урынлашыу.*

**ҠОҘАЛАУ** *ҡ.* **1.** Ҡыҙ һоратыу; яусылау. *Яу баҫылып күп тэ үтмэй, бер бай тархан Ҡарасэсте үҙенэ ҡоҙалай башлай.* З. Әхмэтов.

**2.** *күсм. һөйл.* Ниҙер һорап, ҡайҙалыр өгөтлэп, ризалатырға тырышыу. *[Шкафты] ҡоҙалаусы-*

*лар күбәйҙе. «Бабай, шкафыңды миңә һыйлайһыңмы әллә?» — тип ялкытып бөттөләр.* Р. Солтангәрәев.

**ҠОҘАЛАШЫУ** *к.* **1.** Ҡоҙа-ҡоҙағый булышыу. *[Борон] үҙ араңдан ҡыҙ алырға, ҡыҙ бирергә ярамағанлыҡтан, ҡыпсаҡтар ҙа, шаҡмандар ҙа ауылдың башҡа аралары менән ҡоҙалашҡан, тамыр бәйләгән.* Б. Бикбай. *[Таһыл:] Ҡоҙалашыу йолаһы буйынса, ҡыҙ атаһы булған бей атама бирерһегеҙ һырға һабағын.* Х. Ғәбитов.

**2.** *кар.* **ҡоҙалау** 2. *Келәтте һатып алыуҙа .. Солтанов үҙе ҡоҙалашҡан.* Б. Бикбай.

**ҠОҘАСА** *и.* **1.** Өйләнешкән ҡыҙ менән егеттең йәки ир менән ҡатындың ата-әсәһенән кесе ҡатын-ҡыҙ туғандары (бер-береһенә ҡарата).

**2.** *һөйл.* Ир-аттың таныш булмаған үҙенән йәш ҡатын-ҡыҙға өндәшеү һүҙе.

♦ **Ҡоҙаса сәйе** һәр ике тарафта (ҡыҙ һәм егет яғында) ҡоҙа булып һыйланып йөрөгәндә, ҡоҙасаларҙың туйҙағы йәштәрҙе йыйып үткәргән мәжлесе (сәй эсеп бөткәс, һәр ҡоҙа сынаяғын көмөш тәңкә һалып түңкәрә). *Ҡоҙаса сәйе эсереү.*

● *Ҡоҙасаң биргәнде ҡуйыныңа ал, ҡоҙасаң әйткәнде күңелеңә һал.* Мәҡәл.

**ҠОҘҒОН** *и.* **1.** Ғәҙәттә аулаҡ урындарға оялай торған ялтыр ҡара йөнлө эре ҡош. *Бейек тә бейек оса ҡоҙғон ҡош, унан бейек осор ыласын бар.* Салауат Юлаев. *Ҡоҙғон былай тип әйткән ти: .. Мин ҡан эсмәй, ит еймәй, үләкһәнең күҙ майын өс көндә бер соҡомай һис донъяла торалмам.* «Урал батыр».

**2.** *күсм. һөйл.* Ҡомһоҙ кешегә ҡарата әйтелә.

**3.** *күсм.* Дошман самолеттары тураһында әйтелә.— *Ҡоҙғондар ҡуҙғала,— тине комдив майор Кусимовҡа башы менән көнбайышҡа күрһәтеп.— Ҡара, ҡанаттарын ҡырҡ.* Ә. Ихсан.

♦ **Ас ҡоҙғондай** нимәгәлер ҡомһоҙланып йәбешкән кешегә әйтелә.

● *Бүренеке уртаҡ, ҡоҙғондоҡо ағас башында.* Әйтем. *Емдектән ҡоҙғон ерәнмәҫ.* Әйтем. *Үләкһә янына ҡоҙғон йыйылыр.* Әйтем.

**ҠОҘОҠ** *и.* Һыу алыу өсөн ҡаҙып, бура төшөрөп эшләнгән соҡор. *Сиртмәле ҡоҙоҡ. Сығырлы ҡоҙоҡ.* ■ *Билал сығырлы ҡоҙоҡтан һыу алып туры аттарҙы эсерҙе.* Ә. Бәли.

♦ **Артезиан ҡоҙоғо** *кар.* **артезиан.**

**ҠОҘУРИ** [*ғәр.*] *и.* Дин-шәриғәт ҡанундары, дин йолаларын үтәү тәртибе хаҡындағы иҫке бер мәҙрәсә дәреслеге. *Бер ҡоҙури дәреслеге кәрәк ине миңә. .. Намаҙ, зәкәт, ғөшөр, ураҙа тураһында яҙылған был китапты һорағас, мәзиндең күңеле йомшап китте.* Ғ. Ғүмәр.

**ҠОЖАҠА** *и. диал.* **1.** Таҙ ҡутыры, таҙ. *Таҙҙың ҡожаҡаһы ҡалҡа.*

**2.** Тырнансыҡ.

**ҠОЖОНОУ** *к. диал.* Тырнаныу.

**ҠОЖРАЙЫУ** *к. диал.* Шоҡрайыу. *Ҡожрайып ултырыу.*

**ҠОЙҘОРОУ** *к. йөкм. кар.* **ҡойоу.** *Һыу ҡойҙороу.* ■ *Кәбән ҡойҙораһы урынға, уны [егетте] картуф еренә ебәрәләр.* М. Тажи. *Көмөш ҡенә йөҙөҡ ҡойҙорҙом егерме тин көмөш аҡсанан* (Халыҡ йырынан).

**ҠОЙҘОРТОУ** *к. йөкм. кар.* **ҡойҙороу.** *Көмөштән балдаҡ ҡойҙортоу. Һыу ҡойҙортоу.*

**ҠОЙКА** *и.* **1.** Өткән мал тиреһе. / *һөйл.* Кешенең баш тиреһе. *Ярылып, ҡубып сыҡҡан баш ҡойкаһынан аҡҡан ҡан тамсылары уның [Түрәбайҙың] ҡул һыртын йыуып төштө.* Т. Хәйбуллин.

**2.** Өткән тиренән бешереп һыуытылған ашамлыҡ; тертелдәк.

**3.** *күсм. мыҫҡ.* Ҡулынан килмәгән эшкә һ. б. ынтылған, шәп булып маташҡан кешегә әйтелә. *Ҡойка, нимә тигән була, тәүҙә үҙен белһен әле.*

♦ **Ер ҡойкаһы** ер ҡыртышы. *Ер ҡойкаһын яндырып, алтындан ут тамдырып, беҙ киләбеҙ.* Ғ. Сәләм. **Эт ҡойкаһы** кешене кәмһетеп, мыҫҡыллағанда әйтелә. *[Ишмырҙа:] Ай, эт ҡойкаһы, шул ҡыҙҙың һиңә бараһы бармы?* Д. Юлтый.

● *Аста ейгән ҡойкаңды туҡ булғанда онотма.* Мәҡәл. *Берәүҙә ҡойка ите ашаһаң, үҙең оса ите әҙерлә.* Мәҡәл.

**ҠОЙЛОҒОУ** *к. һөйл.* **1.** Күп булып ҡойолоу, туҡтауһыҙ ағыу. *Бала тапҡандан һуң ҡойлоғоп йөрөй.*

**2.** *күсм.* Бер туҡтауһыҙ күп булып килеү; ағылыу. *Һырт артынан машиналар ҡойлоғоп сығып ҡына торалар.*

**ҠОЙЛОҒОШОУ** *к.* Күп булып төрлө ерҙән ҡойолоу. *Бөтә кеше тигәндәй өй һалып бөттө, тик беҙҙекенең генә балсығы ҡойлоғошоп тора.* Һ. Дәүләтшина.

**ҠОЙМА** [1] *и.* Нимәнелер айырып йәки уратып һалынған ҡоролма; кәртә. *Ағас ҡойма. Таҡта ҡойма. Таш ҡойма. Бейек ҡойма. Ҡойма буйы. Ҡойма ҡойоу. Ҡойма һуғыу. Ҡойма аша төшөү.* ■ *[Ҡыҙрас] өсөнсө ҡат һуға, айғыры ҡойма аша һикереп сыға ла ҡуҙҙан юғала* (Әкиәттән). **Селтәрле ҡойма** тар таҡтаны аралы итеп ҡағып эшләнгән ҡойма. *Сәхибә Мәхмүтте .. йәшел селтәрле ҡойма янында осратты.* Ғ. Хәйри.

**ҠОЙМА** [2] *с.* **1.** Ҡойоп яуған, көслө (ямғырға ҡарата).

**2.** Иретеп ҡойоп эшләнгән. *Эйәренең ҡашы алтын, ҡойошҡаны ҡойма алтын, өҙәңгеһе һум алтын.* «Иҙеүкәй менән Мораҙым».

**ҠОЙМАҠ** *и.* Шыйыҡ итеп ондан туҡып, табаға йоҡа итеп ҡойоп бешергән йомшаҡ ашамлыҡ. *Әсе ҡоймаҡ. Тары ҡоймағы. Ыуыҙ ҡоймағы. Ҡоймаҡ ҡойоу.* ■ *[Зөбәржәт] һөт менән йомортҡаға туҡып, йоҡа ғына итеп ҡойған сөсө ҡоймаҡты майҙа йөҙҙөрөп, тәрилкә менән ашаулыҡҡа ҡуйҙы.* З. Биишева.

● *Майһыҙ ҡоймаҡ ҡупмай.* Мәҡәл.

**ҠОЙМАЛАТЫУ** *к. йөкм. кар.* **ҡоймалау.**

**ҠОЙМАЛАУ** *к.* Ҡойма ҡойоу, ҡойма эшләү. *Баҡсаны ҡоймалап алыу. Ҡоймалап ҡуйыу. Ҡоймалап сығыу.*

**ҠОЙМАЛАШЫУ** *к. урт. кар.* **ҡоймалау.**

**ҠОЙМАЛЫ** *с.* Ҡойма менән әйләндереп алынған, ҡоймаһы булған. *Ҡоймалы йорт.*

**ҠОЙМОС** *и.* Кеше умыртҡаһының 4-5 умыртҡанан торған түбәнге өлөшө; ҡойроҡ һөйәге. *Ҡоймос һөйәге.* / Ҡоштоң ҡойроҡ һөйәге.

**ҠОЙМОСОҠ** *и. диал.* Ҡоймос.

**ҠОЙО** *и.* **1.** Шыйыҡ булып ятҡан батҡаҡ.

*Тәгәрмәс юлдары, көпсәк кимәленә тиклем батып, ҡойоға әйләнгән.* Т. Хәйбуллин.

**2.** *кар.* **шишмә.** *Аҡ ҡарсыға кеүек бер ҡаҙ килә, күлгә генә түгел, ҡойоға* (Халыҡ йырынан).

**3.** *диал.* Ҡоҙоҡ.

**4.** *диал.* Мәке.

**ҠОЙОЛДОҠ** *и. һөйл.* Ел-дауыл һ. б. сәбәптән ҡойолоп төшкән орлоҡ, емеш һ. б. *Алма ҡойолдоҡтарын йыйыу.*

**ҠОЙОЛДОРОҠ** *с.* Эшкә, һөнәргә һәләтһеҙ; эшлекһеҙ, булдыҡһыҙ, шамтыр. *Ҡойолдороҡ булыу.* ■ *Ҡойолдороҡ кояңҡыһы бер атлай ҙа биш туҡтай* (Халыҡ йырынан). *Ҡойолдороҡ еңгәһе бар — бер һалмалыҡ он һорай* (Халыҡ йырынан). / Кәмһетеп әйтелә. *[Старшина — Һылыуҡайға:] Тик тор һин, ҡойолдороҡ! Үҙенә күрә түгел..* Б. Бикбай.

**ҠОЙОЛДОРОУ** *ҡ.* Ағыҙыу, түгеү-сәсеү (шыйыҡлыҡ йәки бөртөклө нәмәләргә ҡарата). *Игенде ҡойолдороу.*

♦ **Һәпрәһен ҡойолдороу** *кар.* **һәпрә.**

**ҠОЙОЛМА** *и.* Иретеп ҡалыпҡа ҡойоп алынған металл киҫәге. *Ҡорос ҡойолмаһы. Суйын ҡойолмаһы.*

**ҠОЙОЛОҠ** *и.* **1.** Шыйыҡланып ятҡан бысраҡ, батҡаҡ урын. *Аждаһа ла, юха ла һаҙлыҡ, ҡойолоҡ, мөлкөлдәк урындарҙа .. йәшәй.* (Әкиәттән).

**2.** Ҡойо, шишмә. *[Таңдысаның малдары] һыу эскәндә лә йылға баштарынан, ҡойолоҡтарҙан ғына эсеп, һыуһындарын ҡандыралар.* «Ҡуңыр боға».

**ҠОЙОЛОУ** *ҡ.* **1.** *төш. кар.* **ҡойоу** 1,4—8. *Мискәгә бал ҡойолған. Ҡойолған балдаҡ.* ■ *Көлтәләрҙән ҙурат ҡуйылды, ҙураттарҙан кәбән ҡойолдо.* М. Кәрим.

**2.** Ҡайҙандыр бер ерҙән туҡтауһыҙ ағыу (шыйыҡ нәмәгә ҡарата). *Күҙҙән йәш ҡойола.* ■ *Сөбөрләп кенә ҡойолған һыуға ҡарап торам.* Ә. Вахитов. / *күсм.* Юғарынан һирпелеү, бөркөлөү (яҡтылыҡ, нур һ. б. ҡарата). *Урал тауы һөйөндө, өҫтөнә нур ҡойолдо.* Ш. Бабич.

**3.** Ниндәйҙер бер ерҙән ваҡ-ваҡ булып түгелеү. *Ҡапыл ер һелкенде, өҫкә тупраҡ ҡойолдо.* Д. Юлтый. *Утлыҡсанан ҡойолған бесән һары һыу ҡатыш тиҙәккә болғанып бөткән.* М. Тажи.

**4.** Үҫкән еренән йолҡолоп, һурылып сығып тороу, ҡубып, өҙөлөп төшөү (япраҡ, емеш, орлоҡ, сәс, йөн һ. б. бөртөклө нәмәләр тураһында). *Ашлыҡ ҡойола. Йөн ҡойола. Сәскә ҡойола. Сәс ҡойола. Япраҡ ҡойола.* ■ *[Ҡуян] ҡыштырлап ҡойолған имән сәтләүегенән ҡурҡып, ситкә һикерҙе.* Я. Хамматов. *[Аттар] йәй буйы ябағалары ҡойолмай, ялбырап йөрөй.* Б. Бикбай. *Таштуғайҡай елле тугай икән, сәскәләре ҡойола ел менән* (Халыҡ йырынан).

♦ **Йөҙ(ө) ҡара ҡойолоу** *кар.* **йөҙ** [1]. **Ҡойолоп төшөү** ҡапыл ныҡ ҡурҡыу, ҡаушау. *«Инәгеҙ вафат булып ҡуйҙы ана бөгәсә»,— тине ул [Baһап]. Малайҙар ҡойолоп төштө.* Ж. Кейекбаев. **Ҡойолоп [төшөп] барыу** ныҡ һыҙланып йәки йонсоп ауырайыу (тәнгә ҡарата). *Артыҡ арығанлыҡтан, тәндәр ҡойолоп бара, тиҙерәк йоҡо һорай.* Д. Юлтый.

**ҠОЙОЛТМАҠ** *и. һөйл.* Ҡорот таҫҡағанда табаҡтың төбөндә ҡалған ҡоротҡа һөт ҡойоп иҙеп шыйыҡайтып яһаған иҙмә. *Ҡойолтмаҡ яһау. Ҡойолтмаҡ ялау.*

**ҠОЙОЛТОУ** *ҡ. кар.* **ҡойолдороу.**

**ҠОЙОМСО** *и. иҫк.* Йөҙөк, беләҙек ҡойоусы.

**ҠОЙОН** *и.* Өйөрөлөп юғары күтәрелгән көслө саң бураны; өйөрмә. *Ҡойон килә. Ҡойон күтәрелеү. Ҡойон ҡубыу.* ■ *Күк күкрәй, ер һелкенә, ҡойондар өйөрөлә.* З. Биишева. *Баҫыуҙың киппкән тупрағын ҡойон күтәреп алып киткән.* Ә. Вәли. **Ҡойон уйнау** ҡойон күтерелеү, ҡойон ҡубыу. ■ *Бер саҡ ҡапыл тирә-яҡта ел-дауыл ҡубып, ҡойон уйнап, өйөрмә күтәрелеп киткәндәй булды.* М. Тажи. / Ерҙән ҡупҡан көслө саң-туҙан. *Ауыр снарядтар ергә төшөп, көслө ҡойон күтәрә.* Д. Юлтый. *Ауыл осонда уҡ ул [Тимер олатай] ҡойон күтәреп, елдереп килгән атлыларға осраны.* Ә. Ихсан.

♦ **Ҡойон булып** (*йәки* **кеүек**) **килеү** сан-туҙан туҙҙырып елеп килеү. *Халыҡ ҡойон кеүек килгән аттарға киң юл бирҙе.* С. Ханов. **Ҡойон уйнатыу** аяҡ аҫтында саң күтәреп бик тиҙ йөрөү, ҡыҙыу хәрәкәт итеү, елеү. *Байрамдарҙа [Юламан] ҡойон уйнатып бейегән, тау яңғыратып йырлаған.* З. Биишева. *Һыңараяҡ .. әбей артынан ҡойон уйнатып, атылып килә* (Әкиәттән). **Пуля ҡойоно** көслө, күп итеп һибелгән пулялар тураһында.

**ҠОЙОН-ДАУЫЛ** *и.* Дауыллы көслө ҡойон. *Йәйендәй тулап, һыу ярып, ҡойон-дауыл ҡуптарып, тау-таштарҙы тетрәтеп, Шүлгән күле төбөнән һәүбән донъяға сыҡҡан.* «Аҡбуҙат».

**ҠОЙОНДОРОУ** *ҡ.* Башынан аша һыу ҡойоп сайындырыу. *Баланы ҡойондороу.* ■ *[Ялан-бикә:] Мин улымды әле генә һәйбәтләп ҡойондороп йоҡларға һалдым.* Һ. Дәүләтшина.

**ҠОЙОНЛАУ** *ҡ.* Ҡойон ҡалҡыу, ҡойонло булыу; өйөрөлөү. *Шау-шыулы ҡала. Автобустар саба. Урамдарҙа туҙан ҡойонлай.* М. Тажи.

**ҠОЙОНОУ** *ҡ.* **1.** Баштан аша һыу ҡойоп сайыныу. *Зарядканан һуң душта ҡойоноу.* ■ *[Һыуһылыу:] Был күл минең һарайым, көн дә сығып ҡойонам.* «Заятүләк менән Һыуһылыу».

**2.** *күсм.* Нимәгәлер баштан-аяҡ сумыу. *Түбәндә, тау аҫтында, ай нурына ҡойоноп, тауыш-тынһыҙ ғына Агиҙел ағып ята.* М. Тажи.

**ҠОЙОТҠАҠ** *и. диал. кар.* **ҡойо** 1.

**ҠОЙОУ** *ҡ.* **1.** Һауыттан бер нәмәгә ағыҙыу (шыйыҡ нәмәне). *Ҡойоп биреү. Ҡойоп эсереү. Сәй ҡойоу. Ҡымыҙ ҡойоу. Һыу ҡойоу.* ■ *Тимергәле ҡарт сынаяғына сәйен ҡоя-ҡоя улына күҙ һалды.* Ғ. Дәүләтшин. *[Әлеүкәй ҡыҙға:] Апайыңдың ҡулына һыу ҡойғанда ошо балдаҡты усына төшөр,— тигән* (Әкиәттән). / Бер урындан, һауыттан икенсе ергә күпләп ағыҙыу, бушатыу, ағылдырыу (ваҡ, бөртөклө нәмәләргә ҡарата). *Игенде тоҡҡа ҡойоу. Ҡом ҡойоу. Тупраҡ ҡойоу.* / Емереп-ватып, ваҡлап төшөрөү. *Тәҙрәнең быялаһын ҡойоу.* ■ *Ҡайғы ҡойҙо тештәремде, ҡайһы берҙәрен һурҙырып ташлаттым.* Д. Бураҡаев. *[Роберт:] Ҡабатлап әйтәм, артыҡ һүҙ ысҡындырһаң, тешеңде ҡойормон.* Ғ. Байбурин.

**2.** Ағып барып икенсе бер һыуға, күлгә, диңгеҙгә һ. б. төшөү, ҡушылып китеү. *Туҡ — Һаҡмарға, Һаҡмар — Волгаға ҡушыла. Ә Волга бөтәһен дә Каспийға алып барып ҡоя.* С. Агиш.

*Әүнәш йылғаһы ҡойғас та Яйыҡ киңәйә төшә.* М. Бәлиев. *Ашыға йылғалар, ашыға тауҙарҙан диңгеҙгә ҡойорға.* М. Уразаев.

**3.** Өҫтән ҡойолоп торған һымаҡ күп, көслө итеп яуыу (ямғырға ҡарата). *Ҡояш яңынан юғалды, күкте йәнә ҡара болот томаланы, ямғыр ҡойорға тотондо.* Р. Низамов. *Дауылланып ел туланы, уйнаны йәшен уты, ҡойҙо ямғыр.* А. Игебаев.

**4.** Өҙөлөп төшөү, тирелеү, йолҡолоп сығыу (үҫемлек орлоҡтары, япраҡ, сәскә һ. б. ҡарата). *Муйыл сәскә ҡойған.* ■ *Һары баҡса тиҙҙән япраҡ ҡойоп, ҡороп ҡалыр ҡартлыҡ шикелле.* Ғ. Сәләм.

**5.** Билдәле бер мәлдә өҙөлөп төшөү, йолҡолоп сығыу (ҡош-ҡорт, йәнлектәрҙең йөнө төшөүгә ҡарата). *Ноябрҙә тейендәр ҡауҙарын ҡоя.* ■ *Заятүләк йүгәнен шылтыратһа, уға баҡтаһын да ҡойоп бөтмәгән күк дүнән ҡараған, ти* (Әкиәттән). *Аҡҡош осор, йөнөн ҡойор, уның йөнөн кем йыйыр?* (Халыҡ йырынан).

**6.** Руданы иретеп суйын, ҡорос һ. б. эшләү. *Һүҙ суйын ҡойоу, ҡорос иретеү, домна, мартен цехы хаҡында бара.* М. Тажи. *Ауылдан килгән ҡарт эшсе Ҡорбан был юлы ла тимер ҡоя торған бүлеккә эләкте.* А. Таһиров. *Эшсе иптәш, эҫе был цехта нисә йыл һин ҡорос ҡояһың?* М. Сөндөклө. / Металл, руданы иретеп, унан ниҙер яһау. *Туп ҡойоу. Беләҙек ҡойоу.* ■ *Завод эшселәре үҙҙәренә ирек биреүсе батшаға, хатта Екатерина II армияһында ла булмаған яҡшы туптар ҡойоп бирәләр.* Б. Бикбай. *Комбайнда, вагонда тәгәрмәс һәм күсәрҙәр тимер менән ҡоростан ҡойоп, ҡырып эшләнгән.* Ғ. Ғүмәр.

**7.** Бере өҫтөнә берен һалып, өйөп яһау. *Кәбән ҡойоу. Ҡойма ҡойоу. Баҡсаны әйләндереп ҡойма ҡойоу.* ■ *Ололар әҫкерт ҡоялар. Күбәләрҙе ташып өлгөртөргә кәрәк. Шуға ла малайҙар арыу белмәй эшләйҙәр.* М. Йәғәфәров.

**8.** *этн.* Махсус бер ысул менән эсемлек яһау. *Бал ҡойоу. Буҙа ҡойоу.* ■ .. *Тариҡ бисәһе Бәҙеғол .. бал ҡойоуға ла оҫта.* Т. Хәйбуллин.

**9.** *күсм.* Мул итеп таратыу, һибеү, сәсеү (яҡтылыҡты, нурҙы һ. б.). *Күктә йөҙгән июнь ҡояшы ҙур, шаулы майҙанға бер туҡтауһыҙ йылы, яҡты нур ҡойған .. ҙур ҡояшлы таң ине.* Р. Ниғмәти.

◆ **Йомаҡ ҡойоу** йомаҡ әйтеү. **Кеше тирмәненә һыу ҡойоу** *ҡар.* **тирмән. Йәш ҡойоу** илау. .. *Өҫтөнә ҡайғы килгәндә ҡоймаған йәшен халыҡ.* Р. Ниғмәти. **Ҡан ҡойоу** *ҡар.* **ҡан**[1] 2. **Ҡойоп ҡуйған һымаҡ** (*йәки* **кеүек**) 1) бик матур, килешле. *[Кәюм] ауылда бер егет ине, ҡойоп ҡуйған кеүек ине.* Н. Нәжми. *Уның [Сағынбайҙың] ҡулынан үткән итектәр, кәүеш һәм ҡаталар ҡойоп ҡуйған кеүек була.* Ғ. Ғүмәр; 2) нәҡ шулай, тура килеп торған; һәйбәт. *Ҡойоп ҡуйған артист.* ■ *Киәфәте менән ул [Үҙәнбаев] ҡойоп ҡуйған бейеүсе инде — атлауы етеҙ, кәүҙәһе һығылмалы, хәрәкәте ритмлы.* Т. Сәғитов; 3) бик ныҡ оҡшаған; хас. *Мотаһарға ҡарттар һоҡлана. Ҡойоп ҡуйған атаһы, тиҙәр.* Х. Сафин. **Ҡойоп ҡуйыу** бик матур итеп, оҫта, бик килештереп эшләү. *Ул [Шаҡир ағай] колхоз эшенән бушаған арала кешегә тәҙрә баштарын ҡойоп ҡуя.* Ғ. Ғүмәр.

**ҠОЙОУСЫ** *и.* Нимәнелер иретеп, төрлө металл ҡойоу менән шөғөлләнгән эшсе. *Ҡорос ҡойоусы. Суйын ҡойоусы. Тимер ҡойоусы.*

**ҠОЙОШҠАН** *и.* Эйәр алға шылмаһын өсөн, аттың ҡойроғо аҫтынан тарттырыла торған бау: эйәр ҡайышы; эйәр бауы. *Еҙ ҡойошҡан. Көмөш ҡойошҡан. Атты ҡойошҡанһыҙ менеү.* ■ *[Көтөүҙә] айыл етмәҫ ала ат юҡ, ти, ҡойошҡан етмәҫ ҡола ат юҡ, ти.* «Аҡһаҡ ҡола». *Көмөш кенә эйәр, еҙ ҡойошҡан килешә икән күксәй дүнәнгә* (Халыҡ йырынан).

◆ **Ҡойошҡанға ҡыҫылған тиҙәк [кеүек]** кәрәкмәгән ергә ҡатышҡан, ҡыҫылған кешегә әйтелә. *[Фәни — Тайыпҡа:] Эс бошҡанда йөрөмә әле, ҡойошҡанға ҡыҫылған тиҙәк кеүек, асыуҙы килтереп.* Н. Ҡәрип.

**ҠОЙОШОУ** *к. урт. ярҙамл. ҡар.* **ҡойоу** 1, 6, 7. *Түтәлгә һыу ҡойошоу. Кәбән ҡойошоу.*

**ҠОЙРОҠ** *и.* **1.** Хайуан, йәнлек һәм бөжәктәрҙең артынан сығып торған үҫенде. *Оҙон ҡойроҡ. Сонтор ҡойроҡ. Ялбыр ҡойроҡ. Ҡойроҡ умыртҡалары. Ҡойроҡ төбө.* ■ *Аттарҙың ҡойроғо бөгәрҙәренә тиклем ҡыҫҡа итеп ҡырҡылған.* Б. Хәсән. *Ҡыҫҡа ҡойроҡ, шеш ҡолаҡ ҡуяны күп Урал тау* (Ҡобайырҙан). *Туҡмаҡ ҡойроҡ ҡара бәрәс һуйып ҡунаҡ итәйем* (Халыҡ йырынан). **Ҡойроҡ сәнсеү** ҡойроҡто юғары күтәреү. *Эргәнән, ҡойроғон сәнсеп, саптырып үтте ҡолон.* Ш. Биҡкол. / Ҡоштарҙың артындағы оҙон ҡауырһындар. *Ҡыҙыл кикрек, бөҙрә ҡойроҡ әтәстәре күпшы бик.* Ф. Рәхимғолова. *Ҡарлуғаскайҙарҙың ҡойроғо ҡайсы ғына кеүек айыры* (Халыҡ йырынан).

**2.** Ҡашмауҙың оҙон булып арҡаға төшөп торған өлөшө. *Суклы ҡойроҡ.*

**3.** Пароход, самолёт һымаҡ төрлө нәмәнең артҡы өлөшө. *Һалдың ҡойроғонда барған ике кеше .. ҡойроҡто тейешле яҡҡа һуғырға тырышалар.* Ә. Вәли.

**4.** *күсм. һөйл.* Кемдеңдер артынан ҡалмай эйәреп йөрөгән кеше. *Ҡойроҡ булып йөрөү.* ■ *Ҡойроҡтарын эйәртеп Фатима еңгә килеп инде.*

**5.** *күсм. һөйл.* Эшләнергә тейеш булып та бөтмәй ҡалып, һуңынан үтәлергә тейеш эш. *Ҡойроҡ ҡалдырыу. Ҡойроҡто бөтөрөү.*

◆ **Аҡ ҡойроҡ сәй** *ҡар.* **сәй** 2. **Ат ҡойроғона тағыу** боронғо яза төрө. **Ат ҡойроғон ҡырҡыу** *этн.* боронғо йола буйынса, туй ваҡытында, йәшерен рәүештә, ҡоҙа атының ҡойроғон ҡырҡып, ҡыҙҙың намыҫы юҡлығын, саф түгеллеген күрһәтеү өсөн эшләнгән хәл. **Дөйә ҡойроғо ергә еткәс** (*йәки* **етер**) бер ваҡытта ла булмаҫ нәмәгә әйтелә; ҡыҙыл ҡар яуғас. **Күҙ ҡойроғо** *ҡар.* **күҙ** 1. **Ҡойроҡҡа баҫыу** кемделер ниндәйҙер бер эштә фаш итеү. **Ҡойроҡто бороу** шелтәләп кәрәген биреү. *[Үҙәнбай:] Мин уларҙың [өмәгә сыҡмаған кешеләрҙең] ҡойроғон борормон әле.* М. Тажи. **Ҡойроҡ болғау** 1) ярамһаҡланыу. *Түрә алдында ҡойроҡ болғау;* 2) дөрөҫөн әйтмәй борғаланыу. *Һинең ҡарт көнөңдә нисек алдағаныңды күреп торабыҙ, һин улай ҡойроҡ болғама.* Б. Хәсән. **Ҡойроҡто ла күрһәтмәү** күҙгә лә күренмәй йөрөү. **Ҡойроҡто ҡыҫыу** ҡурҡып йыуашайыу, шымыу. **Ҡойроҡ сейө** *ҡар.* **сей** 2. **Ҡойроҡта**

һөйрәлеү эш, хеҙмәттә һ. б. артта булыу, башҡаларҙан артта ҡалыу. **Ҡойроҡто тоттормау** фаш итергә, тоторға ирек ҡуймау. **Ҡойроҡто һыртҡа һалыу** ҡасыу. *[Тулыбай:] Ат алыштырам тип ҡайтып киткәйне, .. ҡойроҡто һыртҡа һалды булһа кәрәк.* А. Ибраһим-Ҡыпсаҡ. **Ҡойроҡто төйнәү** китергә әҙерләнеп, йыйыныу. *Беҙ икәү генә кәңәшеп ҡойроҡто төйнәнек тә, атайҙарға белдермәй-нитмәй генә китергә булдыҡ.* Б. Ишемғол. **Ҡырҡ ҡойроҡ** ныҡлы һүҙе, характеры булмаған, һүҙҙе төрлөсә һөйләгән аумаҡай кешегә әйтелә. **Тот ҡойроҡто** *мыҫҡ.* тота алмаҫһың, мин тоттормам, тигән мәғәнәлә әйтелә. *Кеше еҫен төлкө әллә ҡайҙан һиҙеп килә лә, тот ҡойроғомдо, тип ҡапҡанды урап китә лә бара.* М. Тажи. **Һыйыр ҡойроғоноң осо тейеү** *ҡар.* **һыйыр. Эт ҡойроғонан төҙ булыу** артыҡ ғәҙел, дөрөҫ булып ҡыланыу. **Эт эткә, эт ҡойроҡҡа** *ҡар.* **эт.**

● *Ике кәмәнең ҡойроғон тотоп булмай.* Мәҡәл. *Күмәк эт араһында бер эттең ҡойроғо бот араһында* (яңғыҙ кешенең күмәк, туғанлы кешеләр араһында хоҡуғы, һүҙе юҡ тигәнде аңлатҡан әйтем).

**ҠОЙРОҠБАУ** *и. диал.* Ҡойошҡан.

**ҠОЙРОҠЛАУ** *ҡ.* Ҡойроғонан тотоу, ҡойроғонан тотоп күтәреү (астан тора алмаған малды). *Һуғыштан һуңғы йылдар ауыр. Һанаулы ғына аттарҙы яҙға сыҡһаң, ҡойроҡлап күтәреүҙән бушамайһың.* Ғ. Вәлиев.

**ҠОЙРОҠЛО** *с.* Ҡойроғо бар, ҡойроҡ яһалған. *Ҡойроҡло булыу.*

**ҠОЙРОҠСО** *и.* Кәмәнең, һалдың ҡойроғон тотҡан кеше. *Ишкәксеһен күрсе: нисек итеп һалды .. оҫта килтерә. Ҡойроҡсоһо тағы етеҙ икән, бейеп килә һалдың өҫтөндә.* В. Вәлит.

**ҠОЙРОҠҺОҘ** *с.* Ҡойроғо булмаған, ҡойроғо юҡ. *Ҡойроҡһоҙ эт.*

♦ **Ҡойроҡһоҙ әҙәм** *кәмһ.* ышанысһыҙ, үҙ һүҙендә тора белмәгән кешегә әйтелә.

**ҠОЙТАЙЫУ** *ҡ. диал.* Ҡойтоланыу.

**ҠОЙТО** *с.* **1.** Тейеш кимәлдән, кәрәк саманан түбән; етешһеҙ, самалы. *Тамаҡҡа ҡойто.* ■ *[Ирназаров:] Мин үҙебеҙҙең телдә һөйләйем инде, иптәштәр, русса яҡ минең бик ҡойто.* А. Карнай. / Нимәнеңдер сифаты, дәрәжәһе түбән, насар. *Быйыл ямғыр юҡлыҡтан, бесән яғы бик ҡойто булды.* Т. Морат.

**2.** Төҫө, килбәте меҫкен, йәмһеҙ, шөкәтһеҙ. *Ҡойто булыу. Ҡойто ғына өй. Ҡойто һыйыр.* ■ *Кола бейә ҡарап тороуға ҡойто ғына күренһә лә, етеҙ хайуан ине.* Н. Мусин.

**ҠОЙТОЛАНЫУ** *ҡ.* Ҡойтоға әйләнеү, ҡойто булыу. *Өҫ-баш яғы ҡойтоланды. Эштәр ҡойтоланды.*

**ҠОҠАНА** *и. һөйл.* Эшләмәй, рәхәт кенә йәшәргә, эшһеҙ ултырырға яратҡан кеше.

**ҠОЛ** *и.* **1.** Етештереү ҡорамалдарынан мәхрүм ителгән, тулыһынса үҙ хужаһының милке һаналған кеше. *Ҡол биләүсе. Ҡол биләүселек. Ҡолдар восстаниеһы. Ҡол булыу. Ҡол итеү.* ■ *Ҡоллоҡтан ҡотҡарыр инем мин ҡолдарҙы; күтәрер инем мин шиғырҙа уларҙы.* М. Хәй. *Ил ағаһы ирҙәрҙең күҙенә күргәш ҡойҙолар; аҫыл да аҫыл ҡыҙҙарҙы ҡол итеп ситкә ҡыуҙылар.* Салауат Юлаев.

**2.** Экономик яҡтан иҙелеп йәшәгән, политик үҙаллыҡы, ирке булмау арҡаһында кемгәлер буйһонған кеше йәки ил һ. б. *Ҡол булып йәшәү.* ■ *Һин ҡол түгел хәҙер, һин иреклe, Башҡортостан тигән илгенәм.* Р. Янбулатова.

**3.** *күсм.* Ирекһеҙ, хоҡуҡһыҙ, кемдеңдер ҡул аҫтында кемгәлер тулыһынса буйһоноп йәшәгән кеше. *Ир ҡоло.* ■ *Элекке заманда ҡатын-ҡыҙға уҡыу йоҡмаған, .. ҡатын-ҡыҙҙар ҡол булып йәшәгәндәр.* М. Тажи. *[Ғәләү — Шәхмиғә:] — Миңә расчет бир. Һинең ҡәбәхәт, ялғансы Ҡәмәреңә ҡол булып тороп булмаҫ..* Т. Йәнәби.

**4.** *күсм.* Тормошон, маҡсатын, бөтә булмышын нимәгәлер буйһондорған кеше. *Мөхәббәт ҡоло. Намыҫ ҡоло. Тойғолар ҡоло.* ■ *Ул көрәшеү менән, төндә булһа, атылған йондоҙҙарҙы һанай ҙа, көндөҙ булһа, киләсәк тураһындағы үҙенең хыялдарын һөйләй. Хыял ҡоло бит ул беҙҙең Сәлим, романтик.* И. Ғиззәтуллин. *Ирек ҡоло башҡорт, шулай булғас, Дутов, Колчак яҡлы булырмы?.. Үҙен-үҙе ҡара көскә тотоп бирерме?* Ш. Бабич. *Шағирҙар, йырсылар, яҙыусылар ҡол ителде шылтыраған аҡсаларға.* Б. Ишемғол.

♦ **Алла ҡоло** *иҫк.* дини хөрәфәт буйынса, кеше алла тарафынан барлыҡҡа килтерелгән һәм тулыһынса уның хөкөмөндә. *[Аҡйегет — Шәфәҡҡә:] Алла ҡоло булыу, еңгәм, әле бер хәл. Үҙ-үҙебеҙгә әле беҙ ҡол булып йәшәйбеҙ.* М. Кәрим. **Бирәм тигән ҡолона сығарып ҡуйыр юлына** теләгәнең, уйлағаның алдыңа килеп торғанда әйтелә. *[Сәхәп:] Һай, Ғәни ағай, әлдә һин осраның әле, арыу булды. Бирәм тигән ҡолона сығарып ҡуйыр юлына тигәндәй, һин был йөктө зинһар алып ҡайтып бир инде.* Т. Йәнәби. **Бәндә ҡоло** ауырыу, ҡартайыу һ. б. сәбәпле үҙен ҡарап йәшәй алмаған, кеше ярҙамына мохтаж кеше. *Бәндә ҡоло булыу.*

● *Алдаҡсыға ышанған күрәҙәгә ҡол булыр.* Мәҡәл. *Байҙың ҡоло булғансы, ярлының улы бул.* Әйтем. *Ҡол ҡоторһа, ҡойоға ҡармаҡ һала.* Әйтем. *Сереңә баш була алмаһаң, бер көн килеп үҙеңдә ҡол итер.* Әйтем.

**ҠОЛА** [1] *с.* **1.** Үҙе һары, ҡойроҡ-ялы ҡара (ат төҫөнә ҡарата). *Ҡола бейә. Ҡола тай.* ■ *Серле урман. .. Һирәк-һаяҡ доңғорлаҡ тауышына ҡушылып, ҡола бейәнең бышҡырғаны ишетелә.* В. Әхмәҙиев. *Кейеҙбай ҡола толпарын атланып, ҡалаға, батша һарайы алдындағы майҙанға ҡарай сығып китә* (Әкиәттән).

**2.** *и. мәғ.* Шул төҫтәге ат. *Һөйөп менгән мал ҡотом, ти, Аҡһаҡ ҡолам ул да юҡ.* «Аҡһаҡ ҡола».

♦ **Ала ла, ҡола ла** төрлө-төрлө; бер төрлө генә түгел. *Илдең алаһы ла була, ҡолаһы ла була, тиҙәр бит. Һәр кешегә ярап бөтә алмаҫһың.* И. Насыри.

● *Аттан ала ла тыуа, ҡола ла тыуа.* Мәҡәл.

**ҠОЛА** [2] *с.* Асыҡ, буп-буш, бер нәмә булмаған тигеҙ ер. *Ҡола ялан.* ■ *Был ауылдарҙың тирә-яғы ҡола дала. Яҡын тирәлә һис бер ауыл юҡ.* Ғ. Дәүләтшин.

♦ **Ҡола етем** әсәһе, атаһы булмаған, бөтөнләй етем. *[Гөлзаһира:] Әй, балам, балам, ҡола етем ҡалдың бит инде.* Й. Солтанов.

**ҠОЛАҠ** *и.* **1.** Кешенең һәм умыртҡалы хайуандарҙың ишетеү ағзаһы. *Ҡолаҡтың эсе.* ■ *Ҡо-*

*лаҡ эренләүгә татыран ҡысҡырыу .. һымаҡтар халыҡтар араһында күп булһа кәрәк.* Ғ. Амантай. **Ҡолаҡ ярыһы** (*йәки* **пәрҙәһе**) ҡолаҡтың эсендәге тауышты ҡабул итеү өсөн хеҙмәт иткән йоҡа шекәрә шаршау. **Тышҡы ҡолаҡ** ҡолаҡтың тышҡы ишетеү юлынан һәм ҡолаҡ япрағынан торған өлөшө. **Урта ҡолаҡ** ҡолаҡтың барабан ҡыуышлығынан, ишетеү торбаһынан һәм ҡолаҡ арты һөйәге кәрәҙҙәренән торған өлөшө. **Эске ҡолаҡ** ҡолаҡтың ҡусҡарҙан, ярым түңәрәк каналсыҡтарҙан һәм эске ҡолаҡ алдынан торған өлөшө. **Ҡолаҡ ағыу** ҡолаҡ эсенән эрен ағыу.

**2.** Ишетеү ағзаһының тишеге тирәһендәге кимерсәкле өлөшө; ҡолаҡ япрағы. *Бәләкәй ҡолаҡ. Ҡолағы ҙур. Уң ҡолаҡ. Һул ҡолаҡ. Ҡарпыш ҡолаҡ. Һалпы ҡолаҡ.* ■ *Аҡҡолаҡ менән Һаҡҡолаҡ убырлы ҡарсыҡты үлтереп, һыуҙан сығаралар. Убыр береһенең ҡолағын өҙөп алған икән* (Әкиәттән). *Алтын алҡа ҡолаҡта, ҡуш беләҙек беләктә* (Халыҡ йырынан). **Ҡолаҡ сөйө** ҡолаҡ тишегенең ал яғында сығып торған бәләкәй генә кимерсәк. **Ҡолаҡ төбө** 1) ҡолаҡ япрағының арты. *Киҙәндем дә .. ҡолаҡ төбөнә тондорҙом.* Ғ. Ғүмәр; 2) *күсм.* яҡын ер, эргә. *Салғы тауыштары сыңлай әле ҡолаҡ төбөндә.* Ғ. Мәсғүт. *Әллә ҡайҙа ытбылдаған бүҙәнә тауыштары ҡолаҡ төбөндә генә ишетелә.* Һ. Дәүләтшина. **Ҡолаҡ япрағы** ишетеү ағзаһының тышҡы кимерсәк өлөшө. *Өйрәкморондоң ҡолаҡ япраҡтары юҡ, ә ҡолаҡ тишектәре һыуға сумғанда йомола. Ҡолаҡ япраҡтарына ҡәҙәр ҡыҙарған.* **Ҡолаҡты ҡайсылау** һағайып, ике ҡолаҡты торғоҙоп ян-яҡҡа йөрөтөү (күберәк атҡа ҡарата). *Шау-шыуҙан, ялҡындан өркҡән аттар ҡолаҡтарын ҡайсылап аҙбар эсендә мөйөштән-мөйөшкә һырыҡты.* Ж. Кейекбаев.

**3.** Төрлө тауыш һ. б. ҡабул итеү, ишетеү һәләте. *Ҡолағы сос. Ҡолаҡҡа ят тауыш. Ҡолаҡ тоноу.* ■ *Тауыш, ыңғырашыуҙар бөтәһенең ҡолағына барып етте. .. Ҡайһылар тәҙрәнән ҡарарға тырышалар.* Т. Хәйбуллин. *Ҡолаҡҡа бик яғымлы тауыш килгән кеүек, ләкин аңлашылмай. .. Үҙем ҡолаҡҡа салынған тауыштарҙы ишетергә, аңларға тырышам.* С. Агиш. **Ҡолаҡ асылыу** тоноп торғандан һуң ишетә башлау. *Шул ваҡыт минең бер ҡолаҡ асылды. Ул ҡолаҡҡа туп тауыштары, пуляларҙың выжлауҙары ишетелә.* Д. Юлтый. **Ҡолаҡҡа ҡаты** *йәки* **ҡаты ҡолаҡ** насар ишеткән, һаңғырауыраҡ кешегә ҡарата әйтелә. *Уныһы [ҡарты] тағы ҡолаҡҡа ҡаты, бер нәмә һөйләйһең, ул әллә нимә тукый.* Х. Ибраһимов. **Ҡолаҡҡа салыныу** әҙ-мәҙ генә ишетелеп ҡалыу. *Әбей менән бабайҙың ҡолағына бала илаған тауыш салынған* (Әкиәттән). **Ҡолаҡ ҡатыу** насар ишетә башлау. *Һигеҙенсе тиҫтәгә сыҡҡан күп кенә ҡарттарҙың күҙе насарая, ҡолағы ҡата, аяҡтары тала башлай.* «Совет Башҡортостаны», 1965, 23 февраль.

**4.** Баш кейеменең ике яғынан һалбырап төшөп торған өлөшө. *Бүрек ҡолағы. Кәпәстең ҡолаҡтарын төшөрөп кейеү.* ■ *Кәпәсемдең ҡолаҡтарын күтәреп бәйләнем.* Й. Солтанов. *Истебай бүркенең ҡолағы эсенән яҙыу сығарып, Ҡотлоярҙың усына йомдорҙо.* Һ. Дәүләтшина.

**5.** Төрлө нәмәләрҙе тотоу, элеү һ. б. өсөн ике яғына ҡуйылған ҡулайлама. *Күнәк ҡолағы. Самауыр ҡолағы. Һандыҡ ҡолағы.* ■ *Арыҫландың әсәһе, .. ҡолаҡ яғынан үтә нык йәмшәйгән, һыу тамсылап торған еҙ самауырҙы ҡайнатып алып килде.* З. Биишева. / Тотоу, тартып кейеү, тартыу өсөн ике яҡтан ҡуйылған бау. *Итек ҡолағы. Нәрәтә ҡолағы.*

**6.** Музыка ҡоралының ҡылын тарттыра торған ҡулайлама; борғос. *Мандолина ҡолағы.* ■ *Ул [Әбелғазин] думбыраның ҡолаҡтарын борғолап көйләргә кереште.* С. Ҡудаш.

**7.** Ҙур һыуҙың бүленеп ярға инеп торған өлөшө. *Диңгеҙ ҡолағы. Йылға ҡолағы. Һаҡмар ҡолағы.* ■ *Ауылды үҙгәс, йылға .. әрәмә араларында айырсалар яһап, ҡолаҡтарға бүленеп китә.* Ж. Кейекбаев. / *күсм.* Сабынлыҡтың урман эсенә инеп торған асыҡ өлөшө; урман эсендә бәләкәй генә асыҡ урын. *Был туғайҙы ҡул менән сабырбыҙ, ҡолаҡтары күп.*

**8.** *диал.* Елгәргестең эре сүп өсөн ҡабырғанан аҫҡа төшөрөлгән улағы. / Шунан төшкән ҡый.

**9.** *диал. ҡар.* **сумар** [1].

◆ **Баҙарҙа ҡолаҡ һаталар, ти** ишетмәй ҡалып, яңынан һораған кешегә мәрәкәләп әйтелә. **Бер ҡолағынан инә, икенсеһенән сыға** кеше һүҙен иҫәпкә алмаған, әйткәнде тыңламаған кешегә әйтелә. **Ҡолағың менән ишет** *йәки* **ишетһен ҡолағың** ныҡ итеп киҫәткәндә әйтелә. *[Ҡунаҡбикә:] Ишетһен ҡолағың, бынан кире унда аяғыңды баҫаҫаҡ булма! Ҡара ҡыҙыҡай.* Д. Юлтый. **Кейеҙ ҡолаҡ** әйткәнде ишетмәйерәк торған кешегә әйтелә. *[Имай — Айбулатҡа:] Һиңә әйтәм бит, кейеҙ ҡолаҡ!* Һ. Дәүләтшина. **Ҡаҙан ҡолағы** *ҡар.* **ҡаҙан. Ҡара ҡолаҡ булыу** бер аҙ үҫеп, елегә бәйләрлек булыу (ҡолонға ҡарата). **Ҡолағыңа кейеҙ ҡапланыңмы әллә** *мыҫҡ.* әйткәнде ишетмәй, өндәшмәй торған саҡта әйтелә. **Ҡолағыңа киртеп ҡуй** ниндәйҙер ҡылыҡты ҡабатламаҫҡа ныҡ иҫкәрткәндә әйтелә.— *Ҡолағыңа киртеп ҡуй, икенсе ишетмәйем ул һүҙеңде,— тине [атайым].* Я. Вәлиев. **Ҡолаҡ итен ашау** (*йәки* **сәйнәү**) бер нәмәне оҙаҡ, ҡабат-ҡабат һөйләнеп шелтәләү. *Донъяның ҡыҙығы китте. Ваҡиға ханым минең ҡолаҡ итен сәйнәргә тотонды. Иртә-кисен аш урынына таш йоттора.* С. Ҡулибай. **Ҡолаҡҡа алыу** әйткәнде тыңлау, ҡаршы килмәү. *[Биктимер:] Бәшәр былағай ул, беҙ әйткәнде ҡолағына ла алмай. Ана ул Ғәлкәй балаларының һүҙен тыңлай.* Б. Ишемғол. **Ҡолаҡ ҡағыу** ниәт иткән, өмөт тотҡан нәмәнән ҡоро ҡалыу, һемәйеү. *[Нәркәс — Һәүбәнгә:] Мине һыуҙан алырһың, бәхеттән буш ҡалырһың, барынан ҡолаҡ ҡағырһың.* «Аҡбуҙат». **Ҡолаҡ ҡарп итеп ҡалыу** бер һүҙгә иғтибар итеп, ҡапыл һағайғанда әйтелә. *Пашҡаның, әйҙәгеҙ Өлкәманды күмәкләп туҡмайбыҙ, тигән һүҙен ишеткәс, уның [Айрастың] ҡолағы ҡарп итеп ҡалды.* Ш. Насыров. **Ҡолаҡҡа ҡыҫтырмау** әйткәнгә бөтөнләй иғтибар итмәү. *Анау балалар уйнауҙан башҡаны белмәй. Тыйып ҡараһаң да ҡолаҡтарына ла ҡыҫтырмайҙар бит!* Ғ. Дәүләтшин. **Ҡолаҡҡа төшөрөү** бер нәмәне белдереү өсөн алдан әйтеп иҫкәртеп ҡуйыу. *Атайҙың ҡолағына төшөр, аҡса ебәрһен. Бында кеше елкәһендә ятып булмай.* Ғ. Хәйри. **Ҡолаҡҡа туҡыу** бер нәмә тураһында ҡабат-

-ҡабат ныҡлап әйтеү. **Колаҡҡа ятыу** мәғәнәле булыу, күңелгә оҡшау һүҙ, хәбәргә ҡарата. *[Ғөбәйҙә:] Ана күптән шулай тиҙәр уны. Был һүҙең ҡолаҡҡа ятырлыҡ исмаһам.* Н. Иҙелбай. *[Барый — Гөлзадаға:] Ҡуй әле, бисәкәй, һис ҡолаҡҡа ятмаҫ һүҙ һөйләйһең. Һин барында миңә кем кәрәк тағы.* Ш. Насыров. **Ҡолаҡ мендәре** *кар.* **мендәр. Ҡолаҡтан ҡолаҡҡа** аҫтыртын ғына, шым ғына һөйләү, һүҙ йөрөтөү тураһында. *Ҡолаҡтан ҡолаҡҡа йөрөгән һүҙ.* **Ҡолаҡ тешләтеү** боронғо йола буйынса, малай менән ҡыҙҙы ҙурайғас өйләндереү өсөн бәләкәстән бер-береһенә тәғәйенләү йолаһын үткәреү (малайҙан ҡыҙҙың ҡолағын тешләтәләр). *Зифа буйым үҫтергәнһең, һатыр өсөнмө, атакайым? Ҡолағымды тешләткәнһең, илатыр өсөнмө, атакайым?* (Сеңләүҙән). **Ҡолаҡты ҡарпайтыу** һүҙгә, тауышҡа иғтибар итеп һағайыу. *Ҡолағыңды ҡарпайтып ололар һүҙен тыңлайһың да ултыраһың.* **Ҡолаҡты сәнсеү** (*йәки* **торғоҙоу**) һағайыу. *Ат ҡапыл быршылдап туҡтаны. Башын күтәреп, ҡолаҡтарын торғоҙоп, алға ҡараны.* Д. Юлтый. **Ҡолаҡ үрә тороу** нимәгәлер ҡапыл аптырағанда әйтелә. *Татар байҙарының ҡолағы үрә тора. Былар һәммәһе лә ниҙер һиҙенә, .. берәй үҙгәреш көткән кеүек ҡурҡыуға төшә.* М. Ғафури. **Ҡолаҡ һалыу** 1) һүҙгә, тауышҡа иғтибар йүнәлтеү. *Ҡолаҡ һалып тыңлау;* 2) әйткәнде тыңлау, иғтибарға алыу. *Олоға ҡолаҡ һалмау яманлыҡтың билдәһе* (Ҡобайырҙан). **Ҡолаҡты шымайтыу** асыуланып, ҡолаҡты артҡа йығыу (атҡа ҡарата). *Ат ҡолаҡтарын шымайтып, һорғолт күҙҙәрен аҡайтып ебәрҙе.* «Совет Башҡортостаны», 1970, 21 февраль. **Ҡолаҡ ярғыс** яман ҡаты, әсе (тауышҡа ҡарата). *Ҡолаҡ ярғыс тауыш менән һөрәнләп ебәргән ел-дауыл.* З. Биишева. **Оҙон ҡолаҡ** күпте белеп, һөйләп йөрөгән кешегә ҡарата әйтелә. *Беҙ ҙә һин һөйләгән был хәбәрҙе ишетеп белдек оҙон ҡолаҡтан.* Х. Ғәбитов. **Үҙ ҡолағың менән ишетеү** һөйләгән кешенең үҙенән ишетеү. *Борон бер батша, халыҡ нисек йәшәй, нимә ашай, нимә уйлай, нимә һөйләй — шуны үҙ күҙем менән күреп, үҙ ҡолағым менән ишетеп ҡайтайым әле тип .. сығып киткән, ти* (Әкиәттән). **Шеш ҡолаҡ** *ситл.* ҡуян. *Сал бөркөттәр оса күктә бейектән ерҙе күҙләп, ҡолағын шымайтып боҫҡан шеш ҡолаҡтарҙы эҙләп.* Ш. Биҡҡол.

● *Күршем һаңғырау тип һөйләнмә, ҡолағына салыныр.* Әйтем. *Ҡолағың менән ишеткәнде күҙең менән күреп бел.* Әйтем. *Ҡолаҡ ишеткәнде күҙ күрер.* Әйтем. *Эшләгәндә йөрәгең елкенһен, ашағанда ҡолағың һелкенһен.* Әйтем.

**ҠОЛАҠАЙ**[1] *и. һөйл.* Ике яғынан тотҡалы һауыт; кәстрүл.

**ҠОЛАҠАЙ**[2] *и. диал.* Һаңғырау.

**ҠОЛАҠБАУ**[1] *и.* Ҡамыттың тәртә менән дуға башына эләктерә торған ике яҡ бауы. *Ҡайыш ҡолаҡбау. Йүкә ҡолаҡбау. Ҡолаҡбауы ысҡыныу.* ■ *Ат шаршыға санаһы менән төшөп киткән. Тыпырсынып ятҡан атты, ҡолаҡбауҙарын киҫеп, һөйрәп сығаргандар.* Й. Солтанов.

**ҠОЛАҠБАУ**[2] *и. диал.* Ҡолаҡ (2 мәғ.) артына сыҡҡан шешек.

**ҠОЛАҠЛАНЫУ**[1] *ҡ.* **1.** *төш. кар.* **ҡолаҡлау.**
**2.** Ҡолаҡ (7 мәғ.) барлыҡҡа килеү, ҡолаҡ ҙһалыу. *Ологолаҡ күле .. Яңы Ҡауарҙы эргәһендә ҡолаҡланып барып бөтә* (Хикәйәттән).

**ҠОЛАҠЛАНЫУ**[2] *ҡ.* Тирә-яғы яҡтылыҡ менән уратылып тороу; кәртәләнеү (айға, ҡояшҡа ҡарата). *Ай ҡолаҡланған.* ■ *Биктимерҙең күҙе айға төштө. Ай ҡолаҡланған икән, иртәгә бик һыуыҡ, йә бик шәп буран булыр ахыры, тип уйланы.* Б. Ишемғол.

● *Ай ҡолаҡланһа, аяғыңды ныгыт; көн ҡолаҡланһа, ҡолағыңды ныгыт.* Әйтем. *Ай ҡолаҡланһа, айлыҡ юлға сыҡ, көн ҡолаҡланһа, һәнәк, көрәгеңде әҙерлә.* Әйтем.

**ҠОЛАҠЛАТЫУ** *ҡ. йөкм. кар.* **ҡолаҡлау.**

**ҠОЛАҠЛАУ** *ҡ.* Ҡолаҡ (4, 5 мәғ.) ҡуйыу. *Башлыҡты ҡолаҡлап бәйләү. Күнәкте ҡолаҡлау.*

**ҠОЛАҠЛЫ** *с.* Ҡолағы бар, ҡолаҡ ҡуйылған. *Ҡолаҡлы бүрек.*

**ҠОЛАҠСА** *и.* **1.** Баш кейеменең ике яғынан төшөп торған өлөшө; ҡолаҡ. *Ҡуян бүркенең ҡолаҡсалары күкрәгенә төшөп торған Зөләйха килеп инде.* Ғ. Хәйри.

**2.** Ҡашмауҙың ике яғындағы сулпылары.

**3.** *диал.* Ҡолаҡсуҡ.

**ҠОЛАҠСУҠ** *и. этн.* Ҡашмау һәм ҡушъяулыҡтың ике сикәһенә тағылған мәрйенле, сулпылы суҡ.

**ҠОЛАҠСЫН** *и.* **1.** (*йәки* **ҡолаҡсын бүрек**) Йәнлек тиреһенән осло түбәле итеп тегелгән, яурынды, ҡолаҡты, тамаҡ аҫтын ябып торған кәпәс. *Аҡ ҡолаҡсын. Төлкө ҡолаҡсын. Ҡолаҡсын кейеү.* ■ *Шаршауҙы аса биреп ҡараһам, зал ап-аҡ тун, ҡолаҡсын бүрек кейгән кавалеристар менән лыҡа тулы.* Ғ. Сөләймәнов.

**2.** *диал. кар.* **ҡолаҡ** 4. *Күптәр бүректәренең ҡолаҡсындарын күтәреп, дала алыҫлығынан килгән тауышты тыңлай башланы.* Ғ. Әмири.

● *Яңы ҡолаҡсынға ышанып, иҫке ҡолаҡсынды утҡа яҡма.* Әйтем.

**ҠОЛАҠТАШ** *и. диал.* Серҙәш.

**ҠОЛАҠҺА** *и.* **1.** Бурандың баш-башы оҙонораҡ булып сығып торған ике өҫкө бүрәнәһе. *Ҡолаҡһаһын һалыу.*

**2.** Сығынсы аттың күҙен ҡаплау өсөн йүгәнгә ике яҡлап тегелгән күн.

**ҠОЛАҠҺЫҘ** *с.* **1.** Ҡолағы (2, 4, 5 мәғ.) булмаған, ҡолағы юҡ. *Ҡолаҡһыҙ бүрек.* ■ *Әсәйем өйҙө йыйыштырҙы, иҙәнде йыуҙы, ҡолаҡһыҙ самауырҙы ағартып ҡуйҙы.* Ғ. Минһажев.

**2.** *күсм.* Ишетмәгән, һаңғырау. *Ҡолаҡһыҙ булып ҡалыу.*

● *Ҡолаҡһыҙға һүҙ әйтһәң, ҡолағының тышынан.* Мәҡәл.

**ҠОЛАН**[1] *с.* Һорғолт һары. *Ҡолан сәс.* ■ *[Ишкужа — ҡатынына:] Мин әйтәм, әллә булмаһа .. Ҡолансәстең исемен ҡушабыҙмы? Беҙҙең балаң да сәсе ҡолан ғына булып үҫеп килә.* М. Буранғолов.

**ҠОЛАН**[2] *и.* Кәҙәһе аттан бәләкәйерәк, башы ҙурыраҡ, текә яллы, йомро тояҡлылар ғаиләһенә ҡараған ишәк ҡойроҡло ҡырағай дала аты. *Мендем генә тауҙың әй башына ҡолан менән болан ауларға* (Халыҡ йырынан).

♦ **Ҡолан таҙа** тап-таҙа. *Ҡолаҡ арты боҙолғанда дарыу һөрткәйнем, ҡолан таҙа булып китте.*

● *Атаһы болан алмағандың улы колан алмаҫ.* Мәҡәл.

**ҠОЛАН**[3] *и.* Асыҡ урын, аҡлан. *Былар икәү [Һарыбайхан менән Ҡарабайхан] йәйен коланда таныша.* «Ҡуҙыйкүрпәс менән Маянһылыу».

**ҠОЛАНҠОЙРОҠ** *и.* Һоло башлы, һабағының эсе ҡыуыш, быуын-быуынлы ҡамыш.

**ҠОЛАНҪА** *и.* Ат тубығының эс яғындағы ҡаты сөйәл.

**ҠОЛАС** *и.* **1.** Йәйелгән ике ҡул осоноң араһы. *Ҡоласы киң. Ҡоласына алыу.* ■ *Нина .. ишек төбөнә баҫа: «Юк, мин һеҙҙе ебәрмәйем!» — ти. Ҡолас йәйеп тора.* Д. Юлтый. **Ҡолас ташлау** ике ҡулды ике яҡҡа йәйеп ебәреү. *Ҡолас ташлап йоклау.* **Ҡолас ташлап йөҙөү** ҡулдарҙы алмашлап һыу өҫтөнә сығарып ташлап йөҙөү.

**2.** Шул аралыҡҡа тиң булған үлсәү берәмеге. *Ике колас ер. Йыуанлығы өс колас. Ҡолас етмәҫлек ер.* ■ *Иген кырында һәр бер кеше өс--дүрт коластан ал бүлеп алған да урак уралар.* Һ. Дәүләтшина.

**3.** *күсм.* Ниндәйҙер эш-хеҙмәттең күләме, ҙурлығы тураһында. *Заманында киң колас алған был поэзия, асылда халыктың әҙәби үҫешмәкәрлеге ине.* Ә. Харисов.

♦ **Ҡолас йәйеү** (*йәки* **кереү**) 1) ихласлыҡ, бөтә күңелде биреп асыҡ йөҙ күрһәтеү. *Ҡолас кереп каршы алыу.* ■ *Сафа мулдакәне таныштары колас кереп каршы алды.* Б. Бикбай. *Айкай ҙа гына сайкай колас кереп, таштар ҙа гына вата ай һарайға* (Халыҡ йырынан); 2) киң күләм, үҫеш алыу. *Ҡолас кереп бесән сабыу. Ҡолас кереп эшләү.* **Ҡырҡ** (*йәки* **алтмыш**) **колас** бик оҙон. *Алтмыш колас аждаһа, йомарланып йомгактай, тупһаға ятып йоклагас, ошо ишектән үтерһең.* «Аҡбуҙат».

● *Ялғансының койрого кырк колас.* Мәҡәл.

**ҠОЛАСАЙ** *и.* Ҡола[1] ат.

**ҠОЛАСЛАУ** *к.* 1. Ҡолас эсенә алыу. *Утынды коласлап ташыу.*

**2.** Ҡулдарҙы киң йәйеү (берәй нәмәгә һуҡҡанда, киҙәнгәндә һ. б.) *Ботаклы имән түмәргә коласлап сапкан сакта сәсрәп китә оскондар.* Ғ. Дәүләтов.

**ҠОЛАТҠА** *и. иҫк.* Уҫал аттың аяғына кейҙерә торған ағас коршау. *Ҡолатка һуғыу.*

**ҠОЛАТЫЛЫУ** *к. төш. кар.* **колатыу 2.**

**ҠОЛАТЫУ** *к.* **1.** Торған ерҙән йәки үрҙән ауҙарыу; йығыу. *Арбанан колатыу. Ҡолата һуғыу.* ■ *Ҡойон [балаларҙы] бәрә лә колата, бәрә лә колата.* Б. Бикбай. *Ҡая ташка карап уҡ аттым, ыласын гына кошто колаттым* (Халыҡ йырынан). / Ҡоларға мөмкинлек биреү. *Баланы колатмай алып йөрөү.*

**2.** *күсм.* Хакимлығын бөтөрөү, урынынан алып ташлау, төшөрөү. *Батшаны колатыу. Батша тәхетен колатыу. Монархияны колатыу.*

**ҠОЛАУ** *к.* **1.** Торған ерҙән йәки үрҙән ауыу; йығылыу. *Арбанан колау. Салкан колау. Эләгеп колау. Ҡолап ятыу. Ҡолап китеү. Ҡолап төшөү. Ҡолаған ағас.* ■ *Тайып китеп аяғы, киткән, ти, егет колап.* Ғ. Әмири. *Төлкө стена буйлап өй башына менә башлаған да, колап төшкән* (Әкиәттән).

**2.** *күсм.* Хакимлығы бөтөү, урынынан төшөү. *Романовтарҙың өс йөҙ йыллык тәхете колаHы.* Һ. Дәүләтшина.

♦ **Өҫкә коларҙай булып тороу** бик бейек һәм текә булыу (тау, ҡая һымаҡ бейек нәмәләргә ҡарата). *Һул якта текә тауҙар өҫкә коларҙай булып тора.* Н. Ҡәрип.

**ҠОЛҒА** *и.* **1.** Йөн, киндер һ. б. иләгәндә көнйәлә бәйләй торған ағас ҡорамал. *Ҡолға башы. Ҡолға төбө.* ■ *Сейәбикә буш үлтырыуҙы кәрәкһенмәне, колғаһын ала һалып, төбөн урындык каҙнаһына терәп, үрге осон түбә тактаға таталаны ла, орсогон алып, төкөрә-төкөрә киндер иләргә тотондо.* Т. Хәйбуллин. *Ҡолғаларға бәйләп йөн иләйем, әллә нигә йөндәрем ырамай* (Халыҡ йырынан).

**2.** Ҡырҡылған, ғәҙәттә әрселгән оҙон нәҙек ағас; ҡыуал, һайғау. *Ҡолға кыркыу.* ■ *Сәмиҙәрҙең .. капка бағанаһына оҙон колға бәйләп куйылған. Уның башында сыйырсык ояһы тора.* Р. Ғабдрахманов. *Аҡмәмбәт .. корок өсөн колға кыркырға төшкән* (Хикәйәттән). / Кәмәне этеп йөрөй торған оҙон таяҡ. *Агиҙелкәй һыуын тәрән тиҙәр, тәрән икән, колға буйламай* (Халыҡ йырынан). **Ҡолға буйы** (*йәки* **хәтле**), **колғалай** буйға бик оҙон (кешегә ҡарата). *Ҡолға буйы һыны менән кәзә-һарыҡ көтөргә тотонған.* М. Тажи.

**ҠОЛДОРАТЫУ** *к.* Ҡороҡто һелккеләп тауыш биреү, тауыш сығарыу. *Ҡорокто колдоратыу.* ■ *Алпамыша, Ҡолтаб әйткәнсә, йылкы араһына инеп, корогон колдората, йүгәнен сылдырлата. Шул вакыт уга табан яман ябагай тай карай.* «Алпамыша».

**ҠОЛ-КӘНИЗӘК** *и. йыйн.* Ҡол һәм кәнизәктәр. *[Иҙеүкәй менән Мораҙым] һандугастай иректе, хур кыҙындай күректе хан кыҙҙарын .. уҙҙәренә кол-кәнизәк яһай.* «Иҙеүкәй менән Мораҙым».

**ҠОЛҠ** *окш.* Шыйыҡ нәмәне ашығып ҡапыл йотҡанда сыҡҡан тауышты белдергән һүҙ. *Ҡолк итеү. Ҡолк иттереп йотоу. Ҡолк итеп калыу.*

**ҠОЛҠ-ҠОЛҠ, колк та колк** *окш.* Шыйыҡ нәмәне ашығып ҡапыл-ҡапыл йотҡанда сыҡҡан тауышты белдергән һүҙ. *Ҡолк-колк итеү. Ҡолк--колк итеп йотоу.*

**ҠОЛҠОЛДАТЫУ** *к.* Ҡолҡ-ҡолҡ иттереү. *Ҡолколдатып йотоу.*

**ҠОЛҠОЛДАУ** *к.* Ҡолҡ-ҡолҡ итеү. *Тамағы колколдап тора.* / *күсм.* Нәмәләр эсергә ныҡ теләп, ашҡынып тороу.

**ҠОЛҠОН** *и. диал. кар.* **калкыуыс** 1.

**ҠОЛЛАУ** *к.* **1.** Ҡолға әйләндереү, кол итеү. *Нуғай илдең ирҙәрен, .. көләс йөҙлө кыҙҙарын — барын коллап хан булған.* «Мәргән менән Маян».

**2.** Хеҙмәтсе, эшсе сифатында файҙаланыу. *Ҡыҙҙың атаһы кейәүен үҙ йомошона колларға үйлаған.* М. Буранғолов.

**ҠОЛЛОҠ** *и.* **1.** Ҡол (1 мәғ.) биләүгә ҡоролған ижтимағи-экономик ҡоролош. *Ҡоллок — эксплуатацияның антик донъяға хас булған беренсе формаһы.*

**2.** *күсм.* Экономик һәм политик йәһәттән бойондороҡло хәл; иҙгенлек. *Ҡоллокта йәшәү.* ■ *Күптәнме һуң әле Башкортостан тома һукыр,*

*коллоҡ иле ине.* Ғ. Амантай. / Ирек-ихтыярҙан мәхрүм, кемдеңдер ҡул аҫтында уға буйһонған хәл. *Иҫке заман ҡатын-ҡыҙының яҙмышы ул — коллоҡ.* Ғ. Рамазанов.

**ҠОЛОҠ** *и. диал. ҡар.* **байтал** 1.

● *Ҡолоҡ бейәнең колоно елгә ҡаршы түҙмәй.* Мәҡәл.

**ҠОЛОҠАЙ** *и. ирк.* **1.** Ҡолон. *Бейә яңырак кына колонлағайны, ҡолоҡайы эйәреп сыҡты.* Ғ. Хәйри.

**2.** *эйл. ф.* **колоҡайым** Балаға яратып, иркәләп әйтелә.

**ҠОЛОҠАС** *и. ҡар.* **ҡолоҡай.**

**ҠОЛОН** *и.* Йылҡы малының балаһы (бер йәшкә тиклем). *Айғыр ҡолон. Бейә ҡолон. Йәш ҡолон.* ■ *Маянһылыу ашығып-ашығып ҡолондарға бауырлыҡ бәйләп йөрөй.* «Ҡуҙыйкүрпәс менән Маянһылыу». **Аҫау ҡолон** ырғып, үрәпсеп торған ҡолон (уны еле башына бәйләйҙәр). **Ҡолон һалыу** ниндәйҙер сәбәптән ваҡыты етмәйенсә ҡолонлап, етлекмәгән ҡолон килтереү.

♦ **Ҡолон майы өҫтөндә** (*йәки* **төшмәгән**) тормош ауырлығын күрмәгән йәштәргә ҡарата әйтелә. *[Әбей:] Бына, йәштәр, һеҙгә донъяла рәхәт әле. Һеҙҙең ҡолон майҙарығыҙ ҙа өҫтөгөҙҙә. Донъя хәсрәтен күрмәгәнһегеҙ әле.* Һ. Дәүләтшина. **Ҡолон таҡыры** *диал.* елелек.

**ҠОЛОНҠОЙРОҠ** *и.* Ҙур ялбар башлы ҡыяҡ үлән.

**ҠОЛОНЛАТЫУ** *к.* Ҡолонлағанын көтөп алыу. *Бейәне ҡолонлатыу.* ■ *[Бай — Ҡыҙрасҡа:] Бейәм йыл да ҡасып ҡолонлай. .. Әгәр шуны һаҡлап ҡолонлатып, ҡолонон миңә .. күрһәтһәң, .. ҡолонон үҙеңә бирер инем* (Әкиәттән).

**ҠОЛОНЛАУ** *к.* Ҡолон тыуҙырыу. *Буҙ бейә үҙе төҫлө матур бер айғыр ҡолон ҡолонлаған* (Әкиәттән).

♦ **Елгә еленләп, көнгә ҡолонлап** *шул уҡ* **елгә еленләп, боҙға быҙаулап** (*ҡар.* **ел**).

**ҠОЛОНЛО** *с.* Ҡолоно бар, ҡолоно булған. *Ҡолонло бейә.* ■ *Аттар араһында бер ҡолонло бейә лә бар ине. Ҡолонсаҡты йәлләп, уны эшкә лә екмәй торғайнылар.* Х. Зарипов.

● *Ҡолонло бейәнән ҡойо һыуы ла артмай.* Әйтем.

**ҠОЛОНСАҠ** *и.* **1.** Яңы тыуған йәш йылҡы малы; ҡолон (өс айға тиклем). *Ыуыҙ һөткә туйған ҡолонсаҡтар ҡойроҡ сәнсеп, сабып уйнаны.* Х. Ғәбитов. *Ҡолон-ҡолон ҡолонсаҡ, һин бик иркә ҡолонсаҡ.* Ғ. Амантай.

**2.** *эйл. ф.* **ҡолонсағым** Балаға яратып, иркәләп әйтелә. *Уның [Тимерҙең] яратып әйткән бар һүҙе — ҡолонсағым була торғайны.* Б. Бикбай. *[Әбей менән бабай] .. баланы йыуындырып, кейендереп, тамағын туйҙырып, ҡолонсағым тип һөйә-һөйә, үҙҙәренең ҡуйындарына алып ятҡандар* (Әкиәттән).

**ҠОЛОШ: алама ҡолош** *иҫк.* 1) алама кейемле кешене кәмһеткәндә әйтелә. *Алама ҡолош, ни йомош; әйтә һал да ҡайта һал;* 2) әллә кем булып, маҡтанып маташҡан кешене кәмһеткәндә әйтелә.

**ҠОЛПА** *и. иҫк.* Дәрәжә, абруй.

**ҠОЛПАЛЫ** *с. иҫк.* Дәрәжәһе ҙур булған; абруйлы, хөрмәтле. *Бошман бей ҙә, үҙенә оҡшап үҫкән балалары ла бөтә Ҡыпсаҡ ерендә ут йөрәкле уҙамандар, ҙур ҡолпалы аҡһаҡалдар булған.* Ғ. Ибраһимов.

**ҠОЛПО** *и.* Кеше алдындағы дәрәжә; абруй. *Кешенең ҡолпоһон күтәреү.*

♦ **Ҡолпо таш** ҙур, ҡалын, өҫтө келән, ҡараҡусҡыл күк таш (ғәҙәттә, кәбергә ҡуялар). **Ҡолпо таш һымаҡ** *йәки* **ҡолпо таштай** ҙур кәүҙәле, мөһабәт кешегә ҡарата әйтелә. *Елләнеп килгән зилский ошо ҡолпо таштай кәүҙәнең [кешенең] тәнкитле күҙ ҡарашы аҫтында өшәнеп ҡалды.* Ғ. Дәүләтшин.

**ҠОЛСО** *и. иҫк.* Ҡол биләүсе. *Мәғрүр ҡолсо коллоҡ бығауҙарын өҙөлмәҫ тип хыял иткәндәр.* Т. Йәнәби. *Ҡолсоноң да бар ялсыһы.* Әйтем.

**ҠОЛТО** *и. диал.* Кәйеф, күңел. *Ҡолтоһо ҡалҡыу күренә.*

**ҠОЛТОР** *с. диал.* Маҡтансыҡ. *Ҡолтор кеше.* ■ *Беляев тәржемә иткәндән башҡа версияларҙағы ҡутыр башлы ҡолтор таҙ Ҡарагол.. — кире образ.* Ә. Харисов. *Ҡутыр башлы ҡолтор таҙ кәбере өҫтөнә дегәнәк үҫеп сыҡты, ти.* «Ҡуҙыйкүрпәс менән Маянһылыу».

**ҠОЛҺОУАЛЛА** [*гәр.*] *и. дини* Аллаға бағышланған бер доға. *Ҡолһоуалла уҡыу.* ■ *Кисә ахшам намаҙын уҡығас, бик ихлас күңел менән әлхәм менән ҡолһоуалланы өс тапҡыр уҡыным да .. һинең һаулығыңа доға ҡылдым,— тине абыстай ..* Т. Хәйбуллин. *[Мазһар:] Ни эшләйһең инде, һинең кеүек мулла малайы булһаҡ, бәлки ҡолһоуалла ғына уҡып йөрөр инек тә бит, донъя шөғөлө артҡан.* Х. Ибраһимов.

**ҠОЛЪЯ** *и. ҡар.* **арҡар.** *Бер-бер генә тауҙар бейек булыр, арҙа ғына менән ҡолъя тигән кейек булыр.* «Тәүеш Мәргән».

**ҠОМ** *и.* Минерал кристалдарының (башлыса кварцтың) ваҡ ҡына бөртөктәре. *Диңгеҙ ҡомо. Йылға ҡомо. Алтын ҡомо. Ҡом ҡатыш. Ҡом бураны. Ҡом һибеү.* ■ *Алтынды ваҡ ҡом араһынан эҙләйҙәр.* С. Агиш / Шул бөртөктәр менән ҡапланған ер, урын. *Ҡомда ҡыҙыныу. Ҡомда үҫеү.* ■ *[Егеткә — Мәскәй:] Атҡан уғың ҡомда үҫкән ҡоба талдан булмаһа, .. мине үлтерә алмаҫ инең, тигән дә үлгән* (Әкиәттән).

♦ **Кәмә ҡомға терәлеү** *ҡар.* **кәмә. Ҡомдан арҡан ишеү** *ҡар.* **ишеү** [1]. **Ҡом елек** *ҡар.* **елек. Ҡом күҙ** *ҡар.* **күҙ. Ҡом күрәне** *бот.* сүллектә үҫә торған ҡаты ҡыяҡлы үлән. **Ҡомо ҡойола башлаған** *мыҫҡ.* кешенең ҡартая башлауы, көсө бөтөүе тураһында әйтелә. *[Зиннәтулла управляющий тураһында:] — Оло инде. Илленән уҙған, ҡомо ҡойола башлаған кеше,— [тине].* Ф. Әсәнов. **Ҡом түләүле булыу** ҡайтарып бөтә алмаҫлыҡ түләүле, ҙур бурыслы булыу. **Ҡом һайыҫҡаны** *ҡар.* **һайыҫҡан. Ҡом шәкәр** ваҡ шәкәр.

● *Ҡомға һипкән беленмәҫ, ҡыҙға биргән күренмәҫ.* Мәҡәл. *Шымда ни була, урты тулы ҡом була.* Мәҡәл.

**ҠОМА** *и. иҫк.* Ҡол ҡыҙ. *[Алпамыша — Барсынһылыуға:] Ҡаҙ төшкән ер ҡама булыр, тирә-яғы уба булыр. Үҙ эйәһен һанымаһа ла, Ҡолтүбәгә ҡома булыр.* «Алпамыша».

**ҠОМАҒАЙ** *с.* Бик, үтә ныҡ ҡомһоҙ. *Аҡсаға ҡомағай. Ашауға ҡомағай.* ■ *Ҡалын биргәнгә саҡлы кейәү ҡыҙ янында өс көндән артыҡ кунһа, ҡомағай тип һанайҙар.* М. Буранғолов.

● *Комағай корһағы өсөн бәләгә төшөр.* Әйтем.

**ҠОМАҒАЙЛАНЫУ** *к.* **1.** Ҡомағайға әйләнеү, ҡомағай булыу. *Батшалар улар ерҙәре артып күбәйгән һайын, байыған һайын комағайлана.* Һ. Дәүләтшина.

**2.** Ҡомағайлыҡ күрһәтеү. *Был кешеләр, бөтә донъя рәхәтен ашауҙан тапкан һымаҡ, комағайланып ашауы кәйефте боҙа башланы.* С. Ҡудаш.

**ҠОМАҒАЙЛЫҠ** *и.* Бик, үтә ҡомһоҙ булыу сифаты. *Комағайлыҡ күрһәтеү.*

**ҠОМАҒЫУ** [1] (ҡомаҡ*ғ*) *к.* Ҡомаҡ менән ҡапланыу, юшҡын ултырыу. *Самауыр комағып киткән.*

**ҠОМАҒЫУ** [2] (ҡомаҡ*ғ*) *к. диал.* Буръяҡланыу.

**ҠОМАЙ** [1] *и. диал. кар.* **ташбаш** 1.

**ҠОМАЙ** [2] *и. диал.* Ҡомайыл.

♦ **Ҡомай үләне** *кар.* **үлән.**

**ҠОМАЙЫЛ** *и.* **1.** Ҡом ҡатыш тупраҡ.

**2.** Һыу төбөндәге ҡом. *Беҙҙең һалыбыҙ комайылға барып терәлде.* Ә. Бикчәнтәев.

**ҠОМАЙЫЛЛЫ** *с. диал.* Буръяҡ. *Шәрифә .. аҡ ташҡа ултырған да комайыллы тулкындарға карап йырлап ебәргән.* Ш. Шаһәр.

**ҠОМАҠ** [1] [*рус.* хомяк] *и.* Кимереүселәр ғаиләһенә ҡараған, нәҙек оҙон ҡойроҡло, һор төҫлө йәнлек; сысҡан. *[Бесәй] алдында яңы ғына йәне сыккан ҙур комак канһырап ята.* Ф. Иҫәнғолов.

**ҠОМАҠ** [2] *и.* Һыу ҡайната торған һауыт (самауыр, сәйнүк һ. б.) төбөнә ултырып ҡатҡан ҡом һымаҡ ҡатлам; юшҡын.

**ҠОМАҠ** [3] *с. диал.* Бурьяҡ. *Комак һыу.*

**ҠОМАҠА** *и. диал. кар.* **ташбаш** 1.

**ҠОМАҠЛАНДЫРЫУ** [1] *к.* Ҡомаҡ [2] менән ҡаплатыу, ҡомаҡлы итеү. *Сәйнүкте комакландырыу. Самауырҙы комакландырыу.*

**ҠОМАҠЛАНДЫРЫУ** [2] *к. диал.* Буръяҡландырыу. *Һыуҙы комакландырыу.*

**ҠОМАҠЛАНЫУ** [1] *к.* Ҡомаҡ [2] менән ҡапланыу, ҡомаҡ ултырыу. *Самауыр комакланған.*

**ҠОМАҠЛАНЫУ** [2] *к. диал.* Буръяҡланыу. *Һыу комакланған.*

**ҠОМАҠТЫРЫУ** [1] *к. диал. кар.* **комакландырыу** [1]. *Сәйнүкте комактырыу.*

**ҠОМАҠТЫРЫУ** [2] *к. диал.* Буръяҡландырыу. *Һыуҙы комактырыу.*

**ҠОМАЛАҠ** *и. бот.* Тут һымаҡтар ғаиләһенә ҡараған йәшкелт аҡ сәскәле, киртләс япраҡлы үрмәле үҫемлек (сәскәһенән әсетке ҡайнаталар). *Комалак сәскәһе. Комалак сүпрәһе. Комалак йыйыу. Комалак киптереү.* ■ *Балтырған көпшәләрен өҙөп, муйыл, карағат, бөрлөгән тиреп, комалак еҫтәренә рәхәтләнеп, тугай бөгөлдәрен, төпкөлдәрен кыҙыра инек.* Х. Назаров.

**ҠОМАН** *и.* Төрки телдәрҙең береһендә һөйләшкән боронғо халыҡ (11—13 быуаттарҙа көнъяҡ Дон-Волга далаларында йәшәгән) һәм шул халыҡтың бер кешеһе.

**ҠОМАР** *и.* **1.** Нимәгәлер ҡарата булған ярһыу теләк; дәрт, мауыҡ. *Комар асылыу. Уйын комары. Эш комары. Ярыш комары.*

**2.** *с. мәг.* Нимә менәндер ныҡ мауыҡҡан, нимәгәлер әүәҫ булған. *Комар һунарсы.* ■ *Һүҙенән һәр әҙәмдең әҙәм һынар, бер-берен кәметеүгә әҙәм комар.* Аҡмулла.

**3.** *с. мәг.* Мал өсөн, байлыҡ өсөн бөтә көсөн һалған; ҡомһоҙ. *Атаһы [Ғамирҙың] гел донъя малы артынан кыуа торған комар кеше булды.* Б. Бикбай.

● *Комарын аскан теләген кандырған.* Мәҡәл.

**ҠОМАРЛАНЫУ** *к.* **1.** Ниндәйҙер теләк, мауыҡ менән ярһыу; дәртләнеү. *Комарланып эшләү.* ■ *Комарланып алған катын тағы ла кыҙыбырак бәхәсләшергә йыйынғайны, бәхеткә каршы, Ғәбделхәкимов үҙе килеп етте.* Я. Вәлиев.

**2.** Туймаҫтай булып ярһыныу; ҡомһоҙланыу. *Комарланып ашау. Комарланып мал йыйыу.* ■ *Комарланып акса тоткан кулдар устарында һығып тотканға, мөлдөрәшкән сәскәләрҙе күреп, эстәремдә уттар токана..* Ғ. Дәүләтов.

● *Үтә кыҙыл тиҙ уңа, комарланған тиҙ үлә.* Мәҡәл.

**ҠОМАРЛЫ** *с.* Ярһыу теләк уятҡан, ҡомар биргән; дәртле. *Комарлы уйын. Комарлы эш.*

**ҠОМАРЛЫҠ** *и.* **1.** Нимә менәндер бик ныҡ мауығыу сифаты. *Ғәбдрәшиттең йәнә бер нәмәгә ҙур комарлығы бар: ул үҙенең буш вакыттарында шахмат уйнарға ярата.* Н. Иҙелбай.

**2.** Ҡомһоҙлоҡ. *Күңелен сорнап рәхәтлек биреп торған милек комарлығы каты ихтыярлы Нуруллаңы йыш кына йомшартып куя.* Ғ. Хөсәйенов.

**ҠОМАРТА** *с. диал. кар.* **томра** [1] 1. *Атайымдың биргән ере комартаһыҙ ятып ут булған* (Сеңләүҙән).

**ҠОМАРТҠЫ** *и.* Борондан ҡалған иҫтәлекле нәмә; мираҫ. *Археологик комартҡы. Әҙәби комартҡы.* ■ *Курай быуаттан-быуатка һакланып, ата-бабанан бер комартҡы булып калған.* Ғ. Сөләймәнов. *Тарихи комартҡыларҙы һәм башка культура байлыктарын һаклау тураһында хәстәрлек — Башкорт АССР-ы граждандарының бурысы.* Башҡорт АССР-ының Конституцияһы, 1984. / Кемдеңдер төҫө итеп һаҡланған иҫтәлекле нәмә. *Атайымдан комартҡы булып калған мылтыкты алып, һунарға киттем.* Н. Мусин.

**ҠОМАРТЫУ** *к.* **1.** Болғандырыу, бурьяҡлау. *Шишмәне каҙҙар төшөп комартҡан.*

**2.** *кусм.* Асыуҙан ҡайнау (ҡанға ҡарата). *Канды комартыу.*

**ҠОМАРЫУ** *к.* **1.** Болғансыҡланыу, бурьяҡланыу. *Ямғырҙан һуң һыу комарҙы.*

**2.** *кусм.* Асыуҙан ҡайнау, болғаныу (ҡанға ҡарата). *Кандары комарып, яралары тоҙланып килгән йыуан корһактар, был һүҙҙе ишеткәс, ярыла яҙҙылар.* Ғ. Дәүләтшин.

**ҠОМАС** [*гәр.*] *и.* Асыҡ ҡыҙыл төҫтәге йоҡа тауар. // *Комас байрак. Комас кулдәк.* ■ *Кыҙыл комас йәйелгән өҫтәлдең ике осонда ла сәскәләр тора.* Ғ. Ғүмәр. **Ҡомас ҡыҙыл** комас төҫөндәге ҡыҙыл.

♦ **Ҡомас мал** *шул ук* **ҡыҙыл мал** (*кар.* **мал**). **Үтмәҫ ҡомас** *шул ук* **үтмәҫ тауар** (*кар.* **тауар**).

● *Өҫтө комас, тамағы ас.* Мәҡәл.

**ҠОМАЯҠ** [1] *и. иҫк.* Салғы яныу өсөн еүеш ҡом һалып йөрөтөлгән һауыт.

**ҠОМАЯҠ** [2] *и. диал. кар.* **комайыл** 2.

**ҠОМБАҒЫШ** *и. һөйл.* Көнбағыш.

**ҠОМҒАН** *и.* **1.** Йыуыныу, сайыныу өсөн тото-

нолған оҙон муйынлы, текә моронло һауыт. *Еҙ комған. Ҡомған ҡапҡасы. Ҡомғанға һыу ҡойоу.* ■ *Яурынына һөлгө элеп, еҙ тас, еҙ ҡомған тотоп, Байрас йылы һыу менән ҡунаҡтарҙың ҡулын йыуҙырып сыҡты.* З. Биишева.

2. *диал.* Сәйгүн. *Ҡомғандағы сәй.*

**ҠОМЙОУ** *к. диал. кар.* **ҡомарыу** 1.

**ҠОМҠАЛАҠ** *и. иҫк.* Еүеш ҡомға манып, салғы яный торған ялпаҡ ағас; ҡомлоҡ.

**ҠОМЛАНЫУ** *к.* Ҡом ҡатнашыу, ҡомға буялыу. *Һыуға барһаң, бар иртәрәк, ҡомланһа ала алмаҫһың* (Халыҡ йырынан).

**ҠОМЛАУ** *к.* Ҡом ҡатнаштырыу, ҡомға буяу. *[Хәсби:] Самауырымды ҡомлап ҡат-ҡат таҙарта торғас, һеләгән төшөрҙөм.* Б. Бикбай.

**ҠОМЛАУЫС** *и. диал.* Ҡомҡалаҡ.

**ҠОМЛО** *с.* Ҡом менән аралаш, ҡом ҡатыш. *Ҡомло тупраҡ.* ■ *Көтөү .. ҡомло ҡырсынға килеп төштө.* Һ. Дәүләтшина. *Таң яҡтыһы ныҡлы беленгәс, ҡыуаҡтар яғынан килгән взвод командиры күренде. Ул ҡомло ҡырсынды шығырлата баҫып, ашыҡмай ғына атлай.* «Совет Башҡортостаны», 1986, 24 июнь. / Ҡом баҫҡан, ҡом ҡаплаған. *Ағиҙелкәй һыуы ай тын икән, яр ситтәре бигерәк ҡомло икән* (Халыҡ йырынан).

**ҠОМЛОҠ** *и.* **1.** Ҡом күп булған, ҡом баҫҡан ер. *Һин әллә Ағиҙел буйындағы ҡомлоҡҡа ҡыҙынырға бараһыңмы?* Р. Ғабдрахманов.

2. Өҫтөн тотош ҡом ҡаплаған сахра; сүл.

3. *диал.* Ҡомҡалаҡ.

**ҠОМОҒОУ** (ҡомоҡ↗) *к.* **1.** Оҙаҡ ултырып ярмаланыу (балға ҡарата). *Ҡомоҡҡан бал.*

2. Ҡом баҫып һайығыу (йылға, күлгә ҡарата). *[Нәркәс — Һәүбәнгә:] Ҡомоғор күл төптәре, ылымыҡ баҫыр ул саҡта.* «Аҡбуҙат».

3. *диал.* Юшҡынланыу. *Ҡомоҡҡан сәйгүн.*

**ҠОМОЙ**[1] *и.* Балсыҡтан яһалған сеүәтә; йәйпәк көршәк. *Һөттө ҡомойға ҡойоу.*

**ҠОМОЙ**[2] *и. диал. кар.* **ташбаш** 1. *Ҡомой ҡаптырыу.* ■ *Һыу керҙем ҡолас ташлап, ашауҙы ла онотоп йөрөнөм, көн буйы ҡомой аулап.* Б. Бикбай.

**ҠОМОҠТОРОУ** *к.* Оҙаҡ ултыртып ярмаландырыу (балға ҡарата). *Балды ҡомоҡтороу.*

**ҠОМОРЛОҠ** *и. диал.* Энәлек. *Ҡоморлоҡ сәскәһе.*

**ҠОМОРТҠО** *и. диал.* Бабасыр.

**ҠОМТАШ** *и.* Ҡомдан барлыҡҡа килгән таш. *Ҡомташ ятҡылыҡтары. Ҡомташ түшәү. Нефть күбеһенсә ҡомташ йәки эзбизташ ҡатламдарынан сыға.* Д. Бураҡаев.

**ҠОМТӨРТКӨС** *и. диал. кар.* **ташбаш** 1. *Яр ситендәге шарлауыҡта, ҡырсын таштарға морон терәп, ҡомтөрткөстәр, бәрҙеләр ял итә.* З. Биишева.

**ҠОМҺАРАҠ** *и. диал.* Ҡобара. *Ҡомһарағы оскас даланың, аңланым мин Амударьяны.* К. Кинйәбулатова.

**ҠОМҺАРЫЛЫУ** *к. кар.* **ҡомһарыу.**

**ҠОМҺАРЫНЫУ** *к. ҡайт. кар.* **ҡомһарыу** 1. *Ҡомһарынып дошман ниҙәр уйлар Октябрҙәр үкереп үткәндә.* Б. Вәлит.

**ҠОМҺАРЫУ** *к.* **1.** Төҫ боҙолоу, ҡараңғы сырай алыу; ҡобара осоу, буҙарыу. *Йөҙө ҡомһарыған. Төҫө ҡомһарыған.* ■ *Бикмырҙаның ҡомһарыған йөҙө аҙ ғына асылып киткәндәй булды ла, тиҙ үк киренән ҡараңғы сырай алды.* Ф. Иҫәнғолов.

2. *күсм.* Асыҡ, салт төҫтө юғалтыу, ҡараңғыланыу; боҙолоу. *Көн ҡомһарыны. Һылыу ҡояш көлә-көлә күҙҙән юғалды.* Б. Вәлит.

**ҠОМҺОҘ** *с.* **1.** Аҡсаға, мал-мөлкәткә туймаған; ҡомар. *Ҡомһоҙ кеше.* ■ *Бар ине замана, ер ҙә, һыу ҙа һинең кеүек [Хәйретдингә ҡарата] ҡомһоҙ йыртҡыстар ҡулында ине.* Б. Бикбай.

2. Ашауға туймаҫ; мәскәй. *Борон-борон заманда, ҡалын ҡара урманда йәшәгән, ти, бер ҡомһоҙ бүре: .. ҡышын, төн һайын бер аранға төшөп, һарыҡ-кәзәне ҡырып йөрөгән, ти.* З. Биишева.

● *Ҡомһоҙ ҡоторһа, ҡоҙоҡҡа ҡармаҡ һалыр.* Мәҡәл. *Ҡомһоҙ үҙе туйһа ла күҙе туймай.* Әйтем. *Ҡомһоҙ эт ҡуян алмаҫ, алһа ла тиреһе ҡалмаҫ.* Әйтем.

**ҠОМҺОҘЛАНЫУ** *к.* **1.** Аҡсаға, малға туймаҫ булыу, ҡомһоҙ булыу. *Һунарсы ҡомһоҙланып, шул төймәне һалдырып алғанына үкенә* (Әкиәттән).

2. Ашап туймаҫ булыу; мәскәйләнеү. *Сверин өҫтәлгә әҙерләнгән икмәк-майҙарҙы ҡомһоҙланып ашай башланы.* А. Таһиров.

**ҠОМҺОҘЛОҠ** *и.* Ҡомһоҙ (1 мәғ.) кешегә хас сифат. *Социалистик милекте шәхси байығыу һәм ҡомһоҙлоҡ маҡсатында файҙаланырға бер кемдең дә хаҡы юҡ.* Башҡорт АССР-ының Конституцияһы, 1984.

**ҠОМҺОЛ** *с.* Ҡом ҡатнаш, әҙ генә ҡомло. *Ҡомһол тупраҡ.*

**ҠОМҺОНОУ** *к. диал.* Ҡомһоҙланыу. *Биләүендә тибенеп ятҡан ҡыҙын супылдатып үпте ҡомһоноп.* М. Тажи.

**ҠОМҺОРАУ** *к. диал.* Ҡомһарыу. *[Егеттең] төҫө лә бик асыулы, ҡомһорап тора икән, тим.* «Мәргән менән Маянһылыу».

**ҠОМҺОУ** *с.* Ҡараңғы сырайлы; бошонҡо, бойоҡ. *Йөҙө ҡомһоу.* // *Шүлгән ҡомһоу йөрөгәнгә, һаман шиге булғанға, һытыҡ йөҙөн күргәнгә Һомай унан һағайған.* «Урал батыр».

**ҠОМҺӨРГӨС** *и. диал. кар.* **ташбаш** 1.

**ҠОМЪЯНЫУ** *и. диал.* Ҡомҡалаҡ.

**ҠОН** *и.* **1.** *тар.* Үлтерелгән кеше өсөн яуап итеп түгелгән ҡан йәки түләтелгән хаҡ. *Ҡон ҡыуыу. Ҡон ҡайтарыу. Ҡон һорау. Ҡон түләтеү.* ■ *[Күсәкби:] Мин атамдың нindәй ҡонон алайым, минең атам тере бит, уны һис кем үлтермәгән һәм һис кем яҙалағаны юҡ.* «Күсәкби». *Етем ҡалған ҡатын губернаторҙың үҙенә үк барырға мәжбүр була. Губернатор иһә кеше үлтергән кешеләрҙән ҡон түләтергә ҡуша.* С. Галин.

2. Бер төрлө насарлыҡҡа йәки яманлыҡҡа ҡайтарылған яуап; үс. *Кемдәндер ҡон алыу. Ҡон ҡайтарыу.* ■ *Уралымды талаған яуыз хандан ҡономдо ала торған батырмын.* «Мәргән менән Маянһылыу».

3. Кеше иҫәбенә, кеше көсөнән үҙләштерелгән хаҡ. *[Гөлйөҙөм:] Йәштән төшөп һеҙгә эшләнем — ағыу сәсеп оҙатаһығыҙ. Кеше ҡоно күпкә ебәрмәҫ әле.* Һ. Дәүләтшина.

● *Аттың ҡоно тауҙа һынала, егеттең ҡоно яуҙа һынала.* Әйтем.

**ҠОНАЖЫН** *и.* Ике йәштән өс йәшкә тиклемге бейә. *Алма сыбар ҡонажын.*

**ҠОНАН** *и.* Ике йәштән өс йәшкә тиклемге айғыр. *Туры бейәнең ҡолоно йүгән кейҙергәндә ҡонан, серге һалғанда дүнән, эйәр һалғанда толпар булды, ти* (Әкиәттән).

♦ **Ҡонан үгеҙ** ике йәштән өскә тиклемге үгеҙ.

**ҠОНАНСА** *и. диал.* Ҡонажын.

**ҠОНАР** *с.* Эшкә уңған; эшлекле, булдыҡлы. *Ҡонар егет. Ҡонар булыу.*

**ҠОНАРЛЫ** *с. ҡар.* **ҡонар.** *Ҡонарлы кеше.*

**ҠОНАРҺЫҘ** *с.* Эшкә уңмаған; эшлекһеҙ, булдыҡһеҙ. *Ҡонарһыҙ кеше. Ҡонарһыҙ булыу.*

**ҠОНДОҘ** *и.* **1.** Кимереүселәр төркөмөнә ҡараған көрән йөнлө, яҫы яланғас ҡойроҡло һыу буйы йәнлеге. *Ҡондоҙ тиреһе.* ■ *Көнө буйы эшләп талғандар ҙа, өңдәрендә йоҡлай ҡондоҙҙар.* М. Уразаев. *Элегерәк Камчатка ҡондоҙоноң тиреһе донъяла иң ҡиммәтле йәнлек тиреһе ине.* Ж. Кейекбаев. *Ҡапҡан ғына һалдым ай күк боҙға, ҡама йәнлек менән ҡондоҙға* (Халыҡ йырынан).

**2.** *с. мәғ.* Шул йәнлектең тиреһенән тегелгән. *Ҡондоҙ бүрек.*

♦ **Һаҙ ҡондоҙо** кимереүселәр төркөмөнә ҡараған ҡиммәт тиреле, һыуҙа һәм ерҙә йәшәгән йәнлек һәм шул йәнлектең тиреһе; нутрия.

**ҠОНДОР** [*рус.* ⟨*исп.*] *и.* Башы, муйыны яланғас булып, емтек менән туҡлана торған эре йыртҡыс ҡош (Көньяҡ Америкала йәшәй).

**ҠОНДОРАҠ** *и.* **1.** *бот.* Ҡыяҡлылар ғаиләһенә ҡараған ҡыяҡ япраҡлы һаҙ үләне; һаҙ мүге. *Бабай байға утын ҡырҡҡан, йүкә һүйгән, күмер үртәгән, ҡондораҡ йолҡҡан, бүрәнә ҡырҡҡан* (Әкиәттән).

**2.** *с. мәғ.* Ҡуйы, нәҙек, ваҡ һабаҡлы, ваҡ башаҡлы (ашлыҡҡа ҡарата). *Быйыл иген ҡондораҡ булды.*

**ҠОНДОРАУ** *к.* Тап-таҙа, тоноҡ булыу. *Ҡондорап та ятҡан һалҡын шишмә эсһәң, йөрәгеңә боҫтама* (Халыҡ йырынан).

**ҠОНЙОР** [1] *с. диал. ҡар.* **ҡондораҡ** 2. *Ҡонйор игендең башағы ла ваҡ була.*

**ҠОНЙОР** [2] *с. диал.* Мыштыр, бызмыр. *Ҡонйор кеше.*

**ҠОНЙОРЛАУ** *к. диал.* Мыштырлау, бызмырлау. *Ҡонйорлап йөрөй.*

**ҠОНО** *и.* **1.** Һыуһарҙар ғаиләһенә ҡараған оҙон, ҡуйы көрән йөнлө, ялбыр ҡойроҡло, ҡыҫҡа аяҡлы йыртҡыс йәнлек (тайгала йәшәй, күберәк үләкһә ашай). *Ҡоно тиреһе.* ■ *Бүре типкән бөркөттәй, ҡолон тотҡан ҡонолай.* Т. Хәйбуллин.

**2.** *с. мәғ.* Шул йәнлектең тиреһенән тегелгән. *Ҡоно бүрек.*

**3.** *с. мәғ. күсм.* Аҡсаға, мал-мөлкәткә туймаған; ҡомһоҙ. *Ҡоно кеше.* ■ *[Мәхмүт:] Башҡорт байы ла, рус байы ла бер ҡалыптан. Береһен дә маҡтап булмай. Улар икеһе лә ҡоно, икеһе лә ҡарға.* Ж. Кейекбаев.

**ҠОНСОЛ** *с.* Ҡон ҡайтарыусан, үс алыусан. *Ҡонсол кеше.*

**ҠОНТ** *с. диал.* Тырыш. *Эшкә ҡонт кеше.*

**ҠОНТҺОҘ** *с. диал.* Тырыш булмаған, ялҡау. *Эшкә ҡонтһоҙ кеше.*

**ҠОҢҒОР** [1] *оҡш.* Тоноҡ ҡына яңғырап сыҡҡан тауышты белдергән һүҙ. *Ҡоңғор итеү. Ҡоңғор иткән тауыш.*

**ҠОҢҒОР** [2] *с. диал.* Ҡуңыр. *Ҡоңғор күҙ. Ҡоңғор сәс.*

**ҠОҢҒОР-ҠАҢҒЫР** *оҡш. ҡар.* **көңгөр-ҡаңғыр.**

**ҠОҢҒОР-ҠОҢҒОР** *оҡш.* Ҡабат-ҡабат ҡоңғор иткән тауышты белдергән һүҙ. *Ҡоңғор-ҡоңғор итеү. Ҡоңғор-ҡоңғор килеү.*

**ҠОҢҒОРЛАУ** *к.* Ҡоңғор-ҡоңғор иткән тауыш сығарыу; ҡоңғор-ҡоңғор килеү. *Ул [һуйыр] ҡоңғорлаған ваҡытта ғына атлайһың да, уның тыныуына ғына һин дә шып туҡтайһың.* «Совет Башҡортостаны», 1965, 17 март.

**ҠОҢҒОРТ** *с.* **1.** Асыҡ ҡуңыр. *Ҡоңғорт күҙ.* ■ *Ҡоңғорт сәстәремә сал йүгергән, ә һин һаман мине йәш тиһең.* А. Игебаев. / Ҡара һөрөңкө, ҡараңғы сырайлы; томһа. *Ҡоңғорт йөҙлө.*

**2.** Салт аҡ түгел; ҡараһыу. *Бойҙай яҡшылап елгәрелмәгән ине, шуға оно ҡоңғорт булған.*

**ҠОҢҒОРТЛАНЫУ** *к.* Ҡоңғорт төҫкә инеү, ҡоңғорт төҫ алыу. *Тугай тирәктәре томһаланды, ҡоңғортланды баҫыу ситтәре.* С. Ҡудаш.

**ҠОП-** *кис.* **Ҡо-** ижеге менән башланған төп сифат һәм рәүешкә ҡушылып, артыҡлыҡ дәрәжәһе бирә. *Ҡоп-ҡоро. Ҡоп-ҡорош.*

**ҠОП-ҠОП, ҡоп та ҡоп** *оҡш.* Эсе ҡыуыш, тышы йомшағыраҡ нәмәгә һуҡҡанда сыҡҡан тауышты белдергән һүҙ. *Ҡоп-ҡоп итеү. Ҡоп-ҡоп килеү.*

**ҠОПОЛДАУ** *к.* Ҡоп-ҡоп итеү, ҡоп-ҡоп килеү.

**ҠОПТОР-ҠОПТОР** *оҡш.* Ҙур итекте ҡуңалтаҡ кейеп йөрөгәндә сыҡҡан тауышты белдергән һүҙ. *Ҡоптор-ҡоптор итеү. Ҡоптор-ҡоптор килеү.*

**ҠОПТОРЛАУ** *к.* Ҡоптор-ҡоптор иткән тауыш сығарыу; ҡоп-ҡоп килеү.

**ҠОР** [1] *и.* **1.** Тауыҡтар отрядына ҡараған эре ҡыр ҡошо; ҡыр тауығы. *Ҡор көтөүе. Ҡор уйыны.* ■ *Яҙ ине. Ҡаран тауы итәктәрендәге сауҡалыҡтарҙа ҡор уйнай.* С. Кулибай. *Ноябрҙең беренсе яртыһында ҡар ята. .. Ҡорҙар ҡайын, ә һуйырҙар ҡарағай урмандарына ҡусәләр.* «Совет Башҡортостаны», 1969, 1 ноябрь. **Буҙ ҡор** инә ҡор; буҙыҡай. **Ҡара ҡор** ата ҡор; оҙан.

**2. Ҡорҙар, ҡор һымаҡтар** *зоол.* тауыҡтар отрядына ҡараған ҡоштар ғаиләһе исеме (ҡор, ағуна, сел һ. б. инә).

♦ **Ҡор санаһы** *ҡар.* **сана.**

**ҠОР** [2] *и.* **1.** Түңәрәкләп ултырған кешеләр төркөмө. *Йыйынға килгәндәрҙең бөтәһе лә аттарынан төшөп, ҡор булып түңәрәкләп ултыралар.* «Ҡуҙыйкүрпәс менән Маянһылыу». / Һөйләшер, кәңәшләшер өсөн йыйылған йыйын; йыйылыш. *Ҡор йыйыу. Ҡорға килеү.* / Һый мәжлесе; табын. *Ирҙәр ҡоро. Ҡатындар ҡоро.* *[Тәңкәбикә:] Ялсығол эште яйлап ҡайтһа, ололар ҡоро йыйырбыҙ. Бар, килен, ҡымыҙ бешә торһондар.* М. Кәрим.

**2.** Бер берәмеккә ойошҡан халыҡ. *Ҡор башы.* ■ *Ленин телмәр тотҡан көн бөгөн кешеләрҙең бәхет байрамы, халыҡтарҙы оло ҡорға йыйып тулҡынлана уның байрағы.* Б. Вәлит. *Йылдар үтә. Былар ҙың тармағы ҙур бер нәҫел-ырыуға әйләнә. Бөтәһе бер ҡор булып йәшәйҙәр былар* (Хикәйәттән). / Ҡатнашып йәшәгән бер тиҫтер

яҡын кешеләр төркөмө. *Уҙ коронда Әхсән иң зирәк, иң сос егет булган* (Хикәйәттән).

♦ **Ҡатын** (*йәки* **ир, егет**) **ҡорона инеү** олоға һан булып, бүтәндәргә тиң булып йөрөр йәшкә етеү.

● *Яман кеше ҡор боҙа.* Әйтем.

**ҠОР** [3], **баш ҡор** *и.* Кирәгәнең өҫкө ситенән уратып бәйләү өсөн буйлы-буйлы итеп кәзә йөнөнән һуғылған яҫы бау.

**ҠОРАЙЫШ** *и. диал.* Дүрттән ҡорап эшләнгән ҡырпыулы бүрек.

**ҠОРАҠ** [1] *и.* Аралашып, серләшеп йәшәгән бер йәштәге бер быуын кешеләр төркөмө.

**ҠОРАҠ** [2] *и. диал. ҡар.* **ҡорама** 1, 2. *Ҡораҡлы юрған.*

**ҠОРАҠТАШ** *и.* Бер ҡораҡ [1] кешеләре (бер-береһенә ҡарата); замандаш, йәштәш. *Ҡораҡташ булыу.* ■ *[Сәйет:] Эй, Көтөр! Ҡораҡташ булмаһаҡ та, ҡорҙашбыҙ. Һинән алыр малым юҡ, барымта юллар барымтам юҡ* (Хикәйәттән).

**ҠОРАҠҺЫУ** *ҡ. диал.* Ҡорғаҡһыу. *Ҡораҡһыған мискә.*

**ҠОРАЛ** *и.* **1.** Һөжүм итеү, һуғышыу, һөжүмдән һаҡланыу өсөн махсус эшләнгән йәки шул маҡсатта ҡулланылған нәмә. *Һуғыш ҡоралы. Атыу ҡоралдары. Ҡорал заводы. Ҡорал көсө. Ҡулға ҡорал алыу. Ҡорал тотоп яуға сығыу. Ядро ҡоралын тыйыу.* ■ *Беҙ һаҡларбыҙ һине .. илем, .. ҡорал менән, әгәр кәрәк булһа,— тән менән.* М. Хәй. *Салауат батыр ҡоралы — еҙ башаҡлы ғына уҡ икән* (Халыҡ йырынан).

**2.** *йыйн.* Берәй эш башҡарғанда ҡулланыла торған төрлө ҡулайлама, инструмент һ. б. *Ау ҡоралдары. Ауыл хужалығы ҡоралдары.* / Көй башҡарыу, музыка уйнатыу өсөн махсус эшләнгән инструмент рәүешендәге нәмә. *Уйын ҡоралы. Музыка ҡоралдары.* ■ *Ҡурай — башҡорт халҡының милли музыка ҡоралы.* Ғ. Сөләймәнов.

**3.** *күсм.* Нимәнелер тормошҡа ашырыу, нимәгәлер ирешеү сараһы. *Идеология ҡоралы. Тәрбиә ҡоралы. Тел — аралашыу ҡоралы.* ■ *Шул белем [ленинизм] һуғыш көнөндә еңеүсе ҡорал булды.* Р. Ниғмәти. *Сәхнә, ҡуптәр уйлағанса, күңел асыу, ял итеү урыны ғына булмай, бәлки синфи бер ҡорал да булып сыҡты.* И. Насыри.

♦ **Ҡорал күтәреү** ҡорал тотоп яуға ҡалҡыу. **Ҡорал ташлау** еңелеп буйһоноу, көрәште туҡтатыу.

● *Ҡорал кемдеке — заман шуныҡы.* Әйтем. *Ҡоралда ҡырҡ кешенең көсө бар.* Әйтем.

**ҠОРАЛАЙ** *и.* Боландар ғаиләһенә ҡараған бәләкәй генә сатаҡ мөгөҙлө, оҙон, нәҙек аяҡлы, ҡыҫҡа ҡойроҡло, ерән төҫлө ҡырағай хайуан; илек. *Ҡоралай мөгөҙө. Ҡоралай тиреһе.* ■ *Ҡоралайҙар уйнаҡлашып, ҡыуаҡлыҡтар, бейек үләндәр аша ҡар туҙаны туҙҙырып сабалар.* С. Кулибай. *Таштан-ташҡа ырғып уйнап йөрөй сапсан кейек — һиҙгер ҡоралай.* Ҡ. Даян.

♦ **Ҡоралай һыуығы** май айының тәүге яртыһында була торған һыуыҡ.

**ҠОРАЛДАШ** *и.* Ҡорал тотоп бергә һуғышҡан иптәш. *Автоматым ҡыҫып, баҫып торҙом ҡоралдаштарымдың алдында.* Р. Ниғмәти. *Мин ҡоралдаш дуҫтарымдың ҡаһарманлығы хаҡында һөйләп бирергә теләйем.* Ғ. Әмири.

**ҠОРАЛ-ҠОРАМАЛ** *и. йыйн.* Хеҙмәттә ҡулланылған төрлө ҡорал, инструмент һ. б. *Зилский иген эшләү өсөн кәрәкле булған бөтә ҡорал-ҡорамалдарҙы алдан уҡ әҙерләтеп ҡуйған. Ҡамыт, сбруйҙар, тәҙе ағастары, уларҙы бәйләй торған бөлдөргәләрҙе яңы ҡайыштан яһатып, уларҙы дегетләп ҡуйған.* Ғ. Дәүләтшин.

**ҠОРАЛЛАНДЫРЫЛЫУ** *ҡ. төш. ҡар.* **ҡораландырыу.** *Ауыл хужалығы техника менән ҡораландырыла.*

**ҠОРАЛЛАНДЫРЫУ** *ҡ.* **1.** Хәрби ҡорал менән тәьмин итеү, ҡораллы итеү. *Ғәскәрҙе ҡоралландырыу.*

**2.** Эш ҡоралы менән тәьмин итеү. *Ауыл хужалығын ҡоралландырыу.* ■ *Предприятиеларҙы техник яҡтан ҡайтанан ҡоралландырыу һәм реконструкциялар күләме арта.* «Совет Башҡортостаны», 1986, 26 ғинуар.

**3.** *күсм.* Эш сараһы менән тәьмин итеү.

**ҠОРАЛЛАНЫУ** *ҡ.* **1.** Һуғыш кәрәк-ярағтары булдырыу, ҡорал етештереү; ҡулға ҡорал алыу. *Баштан-аяҡ ҡоралланыу. Ҡоралланған кеше.* ■ *Ун ике башҡорт батыры уҡ, ҡылыс менән ҡоралланған ине* (Хикәйәттән).

**2.** Эш ҡоралы менән тәьмин ителеү, эш ҡоралын, эш кәрәк-ярағтарын булдырыу. *Машина менән ҡоралланыу.* ■ *Кеүәтле техника менән ҡоралланған ауыл эшсәндәре колхоздың экономикаһын нығыта.* «Совет Башҡортостаны», 1969, 14 декабрь.

**3.** *күсм.* Ниндәйҙер эшмәкәрлек өсөн кәрәкле мәғлүмәт алыу, тейешле белемгә эйә булыу. *Белем менән ҡоралланыу. Фән менән ҡоралланыу.*

**ҠОРАЛЛЫ** *с.* **1.** Ҡорал тотҡан, ҡоралы булған. *Ҡораллы ғәскәр. Ҡораллы һалдат.* **Ҡораллы көстәр** армия, ғәскәр. *Совет ҡораллы көстәре.*

**2.** Һуғыш ҡоралдары ҡулланылған, төрлө бәрелештәр менән үткән. *Ҡораллы восстание. Ҡораллы яу.*

● *Һөнәрле кеше — ҡораллы кеше.* Әйтем.

**ҠОРАЛҺЫҘЛАНДЫРЫЛЫУ** *ҡ. төш. ҡар.* **ҡоралһыҙландырыу.**

**ҠОРАЛҺЫҘЛАНДЫРЫУ** *ҡ.* Ҡоралһыҙ итеү. *Ғәскәрҙе ҡоралһыҙландырыу.* ■ *Үҙ мылтыҡтарыбыҙ менән ҡайтырға сыҡһаҡ та, Киевкә еткәс, беҙҙе ҡоралһыҙландырҙылар.* Т. Йәнәби.

**ҠОРАЛҺЫҘЛАНЫУ** *ҡ.* **1.** Еңелеп буйһоноу, көрәште туҡтатыу.

**2.** Ҡоралды кәметеү, ҡоралды бөтөрөү. *Ҡоралһыҙланыу политикаһы.*

**ҠОРАЛЫУ** *ҡ. төш. ҡар.* **ҡорау** [1]. *Ҡоралған юрған.*

**ҠОРАМА** *и.* **1.** Өҫкөлләп йәки дүрткелләп ҡырҡылған тауар киҫәге; ҡыйыҡ. *Ҡорама ҡорау. Ҡорама йыйыу.* ■ *Һандыҡ ҡына тулы һай ҡорама, һайлаһам да сыҡмай бөтөнө* (Халыҡ йырынан). **Ҡырҡ ҡорама** ҡорап, ялғап бөтөлгән бик иҫке нәмә.

**2.** Ҡырҡындынан ҡоралған ҡаралды. *Тирәләп ҡорама ҡороп ҡуйылған.* И. Кинйәбулатов.

**3.** *с. мәғ.* Ҡорап яһалған. *Ҡорама юрған.*

**4.** Төрлө киҫәктән, ҡырҡындынан ҡорап яһал-

ған өй ҡаралтыһы; ҡорамал. *Ҡорамалар байтаҡ: һигеҙ босмаҡлы йорт, ике келәт, мал өйө, аласыҡ һәм ҙур синлек.* Ж. Кейекбаев.

**5.** *иҫк.* Йыйынтыҡ. *Шиғырҙар ҡорамаһы.*

**ҠОРАМАЛ** [1] *и. йыйн.* Эш өсөн кәрәк булған һәр төрлө ҡорал, инструмент һ. б. *Ауыл хужалығы ҡорамалдары. Ер ыбыраулау ҡорамалдары. Иген ҡорамалдары. Тағылма ҡорамалдар. Эш ҡорамалдары. Промышленность ҡормалдары.* ■ *Бер саҡ шулай, дүрт атҡа экспедиция ҡорамалдары һәм ун көнгә етерлек аҙыҡ-түлек алып, .. маршрутҡа сығып киттек.* Д. Бураҡаев. *Һәр бер йорттан урткә ҡаршы бирәр ҡорамал билдәләттек.* Ғ. Дәүләтшин.

**ҠОРАМАЛ** [2] *и. диал.* Йорт ҡаралтыһы.

**ҠОРАМАЛАУ** *ҡ. ҡар.* **ҡорау** [1]. *[Мотал — Гөләйшәгә:] Ул бит һиңә тауыҡ кетәге ҡорамалау түгел.* М. Хәйҙәров.

**ҠОРАМАЛЛАНДЫРЫУ** *ҡ.* Ҡорамалдар, төрлө ҡорал менән йыһазландырыу, ҡорамалдар менән тәьмин итеү.

**ҠОРАМАЛЫ** *с.* Ҡорап яһалған, ҡоралған; ҡорама. *Ҡорамалы юрған.*

**ҠОРАМЫШ** *и. диал. ҡар.* **ҡорама 1**, 3. *Дүрткел дә дүрткел ҡорамышты ҡорағым да килмәй, инәкәй* (Сеңләүҙән).

**ҠОРАУ** [1] *ҡ.* Ҡорамаларҙы, киҫәктәрҙе бер-береһенә ялғау, ялғап бер бөтөн итеү. *Ҡорама ҡорап юрған яһау.* ■ *Дүрткел-дүрткел ҡорамышты ҡораһым да килмәй, инәкәй* (Сеңләүҙән).

● *Ҡорап-ҡорап тун тектем — ҡолонло бейәгә биргеһеҙ.* Әйтем.

**ҠОРАУ** [2] *и.* Ҡорап ҡуйылған нәмәнең бер өлөшө. **Ҡырҡ ҡорау** төрлө урындан ямалған, ҡорап нығытылған иҫке нәмә; алама. *Ҡырҡ ҡорау күлдәк. Ҡырҡ ҡорау тәҙрә.*

**ҠОРАШТЫРЫУ** *ҡ.* Унан-бынан тоташтырыу. *Ул [мәзин] ыҫмалалы еп менән ҡораштырып ҡуйған күҙлеген бер кейеп, бер сисеп ҡараны.* С. Агиш.

**ҠОРБАН** [1] [*ғәр.*] *и.* **1.** Мосолман динендә: аллаһ исеменә салынған мал. *Ҡорбан ите. Ҡорбан салыу.* ■ *Тайба әбей башҡа йылдарҙа ҡорбан ашына иң тәүҙә Ғаббас мулланы, абыстайҙары менән .. мәзинде саҡыра торғайны.* З. Биишева. **Аҡ ҡорбан** ҙур теләктәр теләп йәки нәҙер әйтеп аҡ малдан салған ҡорбан. *[Ғәйшә әбей] балаһының һаулығына тип хәйерҙәр бирә, аҡ ҡорбандар сала.* Һ. Дәүләтшина. **Ҡорбан байрамы** ураҙанан һуң 70 көн уҙғас, Зөлхизә айының 10-сы көнөндә уҙғарыла торған дини байрам. **Ҡорбан ғәйете** ҡорбан байрамында мәсеттә уҡылған намаҙ. **Нәҙер ҡорбаны** ниҙер әйтеп салынған ҡорбан. / Кем йәки нимәләр хаҡына ғазап сигергә, нимәләр өсөн үҙен бирергә дусар иткән йән эйәһе йәки нәмә. *Ҡорбан итеү. Ҡорбан һорау.* ■ *Яңы өсөн иҫке ҡорбан, бабай, йәш ағыҙма һалҡын күҙеңдән.* Ғ. Хәйри. *Донъяһы ҡорбан һиңә, әй .. ҡыҙ бала.* Ш. Бабич.

**2.** Төрлө бәлә-ҡаза ваҡытында һ. б. зыян күргән йәки һәләк булған кеше йәки башҡа йән эйәһе. *Көрәш ҡорбаны. Һуғыш ҡорбаны.* ■ *Көрәш юлында ҡорбан булған кешеләр ҡаланың матур еренән һаналған почта ҡаршыһына ерләнде.* З. Шәрҡи. *Ялтырай уткер ҡылыстар, һәр минут ҡорбан көтә.* Б. Мирзанов. *Миһран ҡарттың .. аслыҡҡа ҡорбан булыуҙан башҡа әмәле ҡалманы.* Т. Хәйбуллин. *Торомтайы йөрөй .. осло күҙҙәре менән үҙ ҡорбанын эҙләп.* Ғ. Дәүләтшин. /Яманлыҡ һәм фажиғә арҡаһында ауыр хәлгә ҡалған кеше. *Ғәйбәт ҡорбаны. Яуызлыҡ ҡорбаны.*

**3.** (*баш хәреф менән*) Ир-ат исеме.

**ҠОРБАН** [2] *и.* Һаҙандар ғаиләһенә ҡараған эре аҡ тәңкәле, яҫы, ялпаҡ сөсө һыу балығы. *[Тайфур ҡарт] еҙ батмустай яҫы ҡорбан, ҡарабалыҡ ҡаптыра.* Ә. Чаныш.

**ҠОРБАНЛЫҠ** *и.* Ҡорбан [1] өсөн тәғәйенләнгән мал.

**ҠОРБАШ** *и. шул уҡ.* **ҡор башы** (*ҡар.* **ҡор** [2] 2). *Илгә ҡорбаш булырҙай илдә ирҙәр булғанда, инде тағы ни тием.* М. Буранғолов.

**ҠОРБО** *и. диал.* Ҡорҙаш.

● *Ҡорбоң бөтһә, түйға барма.* Әйтем.

**ҠОРҒА** *и. диал.* Ҡараҫҡы.

**ҠОРҒАҠ** [1] *с.* Бик ҡоро, үтә ҡыуан. *Ҡорғаҡ һауа. Ҡорғаҡ көн.* ■ *Күсеп килдем мин ҡалаға Ырымбур далаһынан, ҡорғаҡ елдәр иҫкән яҡтан, ҡылғандар араһынан.* Й. Солтанов.

**ҠОРҒАҠ** [2] *и. диал.* Ҡорма. *Тәҙрәгә ҡорғаҡ ҡороу.*

**ҠОРҒАҠЛАНЫУ** *ҡ.* Дымһыҙ эҫелә ҡыуанға әйләнеү; ҡорғаҡ булыу. *Көн ҡорғаҡланды.*

**ҠОРҒАҠҺЫУ** *ҡ.* **1.** Ныҡ кибеп ҡаҡшау, ярыҡланыу. *Ҡорғаҡһыған арба. Ҡорғаҡһыған кәмә. Ҡорғаҡһыған тәгәрмәс.* ■ *[Ҡурайсы] һыу уртланы ла ҡорғаҡһыған ҡурайҙың эсенә бөрктө.* Н. Мусин. *Ҡарт моңрәй-моңрәй кемдеңдер ҡорғаҡһыған мискәһенә ҡоршау һуғып маташа ине.* З. Биишева.

**2.** Бик ныҡ кибеү, ныҡ кибеп ҡатыу; һыуһырау. *Ҡорғаҡһыған тупраҡ.* ■ *[Кәрим:] Ҡыҫып бәйләйек, йәш ҡабыҡ ҡорғаҡһып ҡатып киткән.* И. Ғиззәтуллин.

**ҠОРҒАН** *и.* Ишек, тәҙрәгә ҡоролған нәмә; ҡорма. *Ишек ҡорғаны. Ҡорған ҡороу. Ҡорған тартыу.* ■ *Тәнзилә әбей тәҙрә ҡорғанының ситен күтәрә биреп тышҡа күҙ һалды.* М. Тажи.

**ҠОРҒАНЛАУ** *ҡ.* Ҡорған ҡороу, ҡорған менән ҡаплау. *Тәҙрәне ҡорғанлау.*

**ҠОРҒАУ** *ҡ. ҡар.* **ҡурғау.**

**ҠОРҒО** [1] *и.* Һаҙлыҡтағы ҡоро урын, ҡоро һуҡмаҡ. *Ҡорамша керәкәлек аша ҡорғо таҡҡан.* Т. Морат.

**ҠОРҒО** [2] *и. диал.* Ҡорма. *Тәҙрә ҡорғоһо.*

**ҠОРҒОН** *и. диал.* Һуйылған ҡош-ҡорттоң ваҡ-төйәге (башы, муйыны, тәпейе һ. б.). *Ҡорғон ашы. Ҡорғон бәлеше.*

**ҠОРҘАШ** *и.* **1.** Ҡатнашып йәшәгән, йәш яғынан яҡын булған замандаш кеше. *[Яҡуп:] Бергә-бергә ер йыртҡан, тир түккән ҡорҙаштар ни әйтерҙәр ине икән?* Б. Бикбай.

**2.** Бер табында, ҡорҙа булған кеше; табындаш, ултырҙаш.

**ҠОРҘАШЫУ** *ҡ.* Табындаш, ҡорҙаш булыу.

**ҠОРҘОРОУ** *ҡ. йөкм. ҡар.* **ҡороу** [2]. *Тирмә ҡорҙороу.*

**ҠОРЖОУ** *ҡ. диал.* Ныҡ эсеү (һөт аҙығына ҡарата). *Ҡатыҡ ҡоржап киткән.*

**ҠОРҠ-ҠОРҠ** *оҡш.* Ҡоштоң тамаҡ төбөнән

сыҡҡан ҡалын тауышты белдергән һүҙ. *Ҡорҡ-ҡорҡ итеү.* ■ *Бер аҙ баргас, колагыма корк-корк иткән тауыш сагылды. Был һуйыр ине.* Н. Мусин.

**ҠОРҠОЛДАЙ** *и. диал.* Күмәгәй. *Корколдайы йоҙрок хәтле булып сыгып торган арык, оҙон муйынлы, салыш күҙле .. мулла, .. мендәр өҫтөнә менеп ултырҙы.* З. Биишева.

**ҠОРҠОЛДАУ** *к.* Ҡорҡ-ҡорҡ иткән тауыш сығарыу. *Байбисә барып етергә лә өлгөрмәй, кәртә буйында корколдап йөрөгән тауыгының себешен төйләгән тибә лә, кайкалап һауага күтәрелә.* Я. Хамматов. *Коҙгон корколдаһа, мәйет сыгыр.* Һынамыш.

**ҠОРҠОЛДАШЫУ** *к. урт. кар.* **ҡорҡолдау.** *Күктән коҙгондар корколдашып үтеп бара* (Әкиәттән).

**ҠОР-ҠОР** *окш.* Ҡоштоң тамаҡ төбөнән гөрөлдәберәк сыҡҡан ҡалын тауышты белдергән һүҙ. *Кор-кор килеп торналар һөйләшә.*

**ҠОРҠОРАЙ** *и. диал. кар.* **ҡурылдай** [1].

**ҠОРҠОРАУЫҠ** *и. диал.* Боғарлаҡ.

**ҠОРЛАУ** *к.* Мәжлес булып табын ҡороу, ҡор яһау. *Табынды тултырып, корлап ултырган карттар бында һөйләгәндәрҙең бик күбен аңлай алманы.* Ш. Шаһәр.

**ҠОРЛО** *бәйл. һөйл.* Төп килештәге һүҙҙән һуң килеп, сағыштырмаса кимәл-дәрәжәне күрһәтә; тиклем. *Был корло һыуык түгел ине кисә.*

♦ **Ни ҡорло** ни рәүешле, нисек. *[Кинйәбай:] Фронтта хәлдәр ни корло?* С. Мифтахов. **Шул ҡорло** шул тиклем, сикһеҙ, бик. *Шул корло бейек тау.*

**ҠОРМА** *и.* Ишек, тәҙрәгә ҡоролған нәмә; ҡорған. *Селтәр корма. Корма элеү. Корма тартыу.* ■ *Тәҙрә кактылар. Әклимә корманың бер ситен күтәреп тышка караны.* Х. Ғиләжев.

**ҠОРМАЛАУ** *к.* Ҡорма ҡороу, ҡорма менән ҡаплау. *Тәҙрәне кормалау.*

**ҠОРМАН** [1] *и.* **1.** Уҡ-һаҙаҡ һауыты. *Арыҫлан .. корманын иңенә элде.* Ғ. Ибраһимов.

**2.** Шул һауытҡа беркетелгән ҡайыш бау, биллек. *Атанан алтау тыуһа ине, ата юлын кыуһа ине, биленә корман быуһа ине.* М. Буранғолов.

**ҠОРМАН** [2] *и. кар.* **ҡорбан** [2].

**ҠОРМАШ** *с. диал.* Бахыр, меҫкен. *Кормаш кеше.*

**ҠОРМОШ** [1] *с.* **1.** *һөйл.* Һаран, һыҡмыр. *Кормош кеше. Кормош булыу.* ■ *Эй, кыҙык был тормош: йә йомарт, йә кормош. Һул кулга — боҙ һона, уң кулга — куҙ һона.* Т. Йосопов.

**2.** *диал.* Бик ябыҡ, ҡаҡса.

**ҠОРМОШ** [2] *и. диал.* **1.** *кар.* **инҡеш** [1]. *Кормош балы. Кормош корто.*

**2.** Уйын исеме (бер ҡолас ара ҡалдырып ике рәт теҙелеп баҫалар; уртанан, ҡур бүрек кейеп, «ҡормош» йөрөй; ул ике яҡтағы кешеләрҙе һуғырға тырыша, ә тегеләр бының бүркен һуғып төшөрөргә тырыша; кем бүректе һуғып төшөрә — үҙе «ҡормош» була).

**ҠОРМОШЛАНЫУ** *к. һөйл.* Ҡормошҡа әйләнеү, һаранланыу.

**ҠОРМОШЛОҠ** *и. һөйл.* Ҡормош [1] (1 мәғ.) кешегә хас сифат; һаранлыҡ. *Ул да булһа, уҙ кормошлогоноң касафаты: бар кейемен киймәй, һалкын тейҙереп, билһеҙ калды [әбей].* В. Әхмәҙиев.

**ҠОРНА** *и. иҫк.* Йыуыныу өсөн ҡулланылған тәрән һауыт; ванна. *Корнала һыу инеү.*

**ҠОРО** *с.* **1.** Дымланмаған, һыу теймәгән. *Коро кейем. Коро кулдәк. Коро сепрәк. Коро ком. Коро тупрак. Аяк аҫты коро булыу.* ■ *Тышта гына түгел, өй эсендә лә коро нәмә калмаган.* Т. Йәнәби. *Күлдәктәрем коро, тик салбарым гына һыуланган.* Д. Юлтый. .. *Ер шундай коро, йылы, хәл йыйҙыргыс рәхәтлек бирә.* Һ. Дәүләтшина. / Һыу баҫмаған, һыуы булмаған; һыуһыҙ. *Коро үҙәк.* // *Корога сыгыу. Корола калган балык.* // *Йәй көнө йырын кибә, коро ята.*

**2.** Дымы бөтөп кипкән; киреһе сей. *Коро бесән. Коро сыбык.* ■ *Өйҙөң тирәһенә кырк таяк коро утын өйөп сыккандар, ти* (Әкиәттән). / Тереклек һуты бөтөп кипкән, ҡыуға әйләнгән; ҡыуарған, ҡыу (үҫемлектәргә ҡарата). *Коро ботак. Коро агас. Коро һабак.*

**3.** Дымһыҙ, дымлы түгел, һыу парҙары булмаған. *Коро ел. Коро һауа.* ■ *Эсе ел битте, кулды көйҙөрә, коро һауа тынды кура.* З. Биишева. / Сатнама һалҡында була торған, епшек булмаған. *Коро һыуык.* ■ *Аяк аҫтында коро карҙың бер көйгә шыгырлауы миңә музыка кеүек ишетелә.* Ә. Вәли. / Яуым-төшөмһөҙ йәки яуым-төшөм аҙ булған. *Коро йыл. Коро көн.* // *Корога сыҙамлы үҫемлектәр. Корога китеү.* // *Көндәр коро тора.* ■ *[Йәй] бик эҫе, коро килде. Кешеләр .. аҙарынып ямгыр көттөләр.* З. Биишева. *Баш коҫкан арыш кына корога артык бирешмәгән.* Я. Хамматов. **Көн ҡорола, көндөң ҡороһонда** *йәки* **ҡоро көндә** көн ҡоро торғанда, яуым-төшөм ҡамасауламағанда. *Көн корола баҙарга барып калырга кәрәк.* Ғ. Дәүләтшин.

**4.** Артыҡ ныҡ кипкән, майһыҙ. *Коро сәс. Кулдың тиреһе коро, кыштырлап тора.*

**5.** Эсенә әйбер һалынмаған, буш. *Коро мискә. Коро һауыт.* ■ *Егет [кыҙҙың] әсәһенә .. кымыҙ һалмай гына коро туҫтакты бирә.* М. Буранғолов.

**6.** Бер нәмә лә ҡушылмаған, туҡлыҡлы булмаған, буш. *Коро икмәк. Шәкәрһеҙ коро сәй. Коро кәбеҫтә һыуы.* // *Коро гына ашау.* ■ *Ашыгыҙҙың ярмаһы юк, торганы коро һыу бит.* Ғ. Дәүләтов. *[Бисәһе — Шакирга:] һин кунактарҙы коро гына эсергәнһеңдер инде.* Д. Юлтый.

**7.** *кусм.* Йылы тойғоға һаран, ҡаты күңелле, ҡырыҫ. *Коро кеше.* // *Үҙеңде коро тотоу.* ■ *[Рәхилә ханым] һинең инженерың .. ваксыл, бик коро әҙәм ахырыһы, тигәйне.* Ғ. Байбурин. *Тәү карашка коро гына күренгән Әхмәт агай был юлы бөтөнләй икенсе кешегә әйләнгән.* Ф. Иҫәнғолов. / Хис-тойғоһоҙ, һалҡын, рәсми. *Коро яуап.* // *Коро гына һөйләшеү.* ■ *Шәһиҙә ирен .. шактай коро каршыланы.* И. Абдуллин.

**8.** *р. мәғ.* Ҡәтғи рәүештә, ҡаты талап менән, тайпылышһыҙ. *Яңы председатель бик коро куйҙы тәртипте, әйтерһең, бында тимер юлы бар.* Б. Бикбай. **Эште ҡоро тотоу** эш йәки мәсьәләне бик тиҙ һәм ҡыҫҡа хәл итеү.

**9.** *киҫ. мәғ.* Кем йәки нимәнеңдер булмышын бер үҙенсәлек менән сикләп, тейешле сифатта булмағанды күрһәтә; тик. *Коро һөлдә. Һоло ем-*

һеҙ — коро кәбәк. ■ *«Ярҙам итте» батша: ..аңғыҙ, ярлы хужалыкты коро бағанаға калдырҙы.* Х. Ҡунаҡбай. **Ҡоро һөйәк** *шул уҡ* **ҡаҡ һөйәк** (*ҡар.* **һөйәк** [1]). / Ниҙелер йөкмәткеһенән айырып сикләп, мәғәнәһеҙ, файҙаһыҙ булғанын күрһәтә. *Ҡоро исем. Унда коро тел генә.* ■ *Ҡоро кәүҙә күрәшеү өсөн түгел, күрһәтеү өсөн якшы.* И. Ғиззәтуллин. *Ҡоро мал менәнме ни ул, файҙаһы булмағас.* Т. Йәнәби.

♦ **Дарыны коро тотоу** яуға, һөжүмгә ҡаршы һәр ваҡыт әҙер булыу. **Ҡоро аш** 1) итһеҙ аш; 2) ҡоро-һары аҙыҡ. **Ҡоро ер** *ҡар.* **ер. Ҡоро ҡалыу** мәхрүм булып ҡалыу, буш ҡалыу. *Өлөштән коро калыу.* **Ҡоро ҡул** бер нәмәһеҙ, буш.— *Атаң да, ана, кәсепкә барам тип, йәй буйы йөрөп, коро кул ҡайтты.* Т. Хәйбуллин. **Ҡыпыштан коро ҡалмау** *ҡар.* **ҡыпыш. [Һыуҙан] коро сығыу** бәләле, ауыр хәлдән имен ҡотолоу. *[Ҡолсобай — Наҡышев тураһында:] Шахта уның гәйебе менән емерелдеме? Емерелде. Ә ул һыуҙан коро сыкты.* Я. Хамматов.

● *Ҡоро ботаҡ тиҙ һына.* Әйтем. *Ҡоро ашъяулыкка доға булмаҫ.* Әйтем. *Өйгә ингән коро сыкмаҫ.* Әйтем. *Ҡоро һүҙ — куңалтак итек.* Әйтем. *Күпте өмөт иткән аҙҙан коро калған.* Әйтем.

**ҠОРОҒА** *р.* Файҙаһыҙға, бушҡа. *Яумай, корога еләй.* ■ *Ниңә унда корога күҙ һатып торорға?* Ф. Исәнғолов.

**ҠОРОҠ** *и.* Иректәге малды тотоу өсөн ҡулланылған мәскәүле ҡолға. *Ҡорок бауы. Ҡорок һабы. Ҡорок һалыу.* ■ *Ҡороктоң бауы йөн кушып ишелгән кылдан булырга тейеш.* М. Ғөбәйҙуллин. *Яңы корок менән аттар тотоп, китә микән егет бер кайҙа?* (Халыҡ йырынан). // *Ана, ерән бейәне һауырга тип ултырҙы, ул бит бигерәк холокһоҙ, нисек һауыр корокһоҙ.* К. Кинйәбулатова. **Ҡороҡ тотоу** *этн.* туйҙа ҡороҡ менән күрһәтеп ат һайлау (егет күлдәклек йәки таҫтамал бәйләгән ҡороҡ өсөн ҡайны өйөрөнән һайлаған малдың һыртына һала; ҡайны ризалығын әйтә; ҡыҙҙың ағаһы йә еҙнәһе ул малды инселәп тә ҡуя).

**ҠОРОҠАЙ** *с. диал. ҡар.* **биҙәү** [2]. *Ҡорокай катын. Ҡорокай булыу.*

**ҠОРОҠЛАУ** *к.* Ҡороҡ һалыу. *Аҙау малдарҙы короклап тотканда, Тимеркәй бер аҙым атламай шып туктата.* Д. Юлтый.

**ҠОРОҠЛАШЫУ** *к. ярҙамл. ҡар.* **ҡороҡлау.** *Акым атау бейәнең матауын йүнәтеү һылтауы менән еле янына бара ла Шәүрәгә бейә корокаша.* М. Буранғолов.

**ҠОРОЛАЙ** *р.* Ҡоро көйө. *Ҡоролай ашау.*

**ҠОРОЛДАЙ** *и.* Ҡарабаш турғайҙың бер төрө (ояһын һыу буйындағы талға аҫып яһай). *Ҡоролдай тауышы. Ҡоролдай ояһы.*

**ҠОРОЛДАУ** *к.* Ҡор-ҡор иткән тауыш сығарыу. *Болоттан югары королдай торналар.* Х. Кәрим.

**ҠОРОЛМА** *и.* Билдәле бер эш тармағы өсөн тәғәйенләнгән төҙөлөш ҡаралтыһы. *Гидротехник королма. Һугарыу королмаһы. Спорт королмалары.*

**ҠОРОЛОҠ** *и.* **1.** Яуым-төшөм булмаған хәл. *Йәйҙең королого. Ҡоролокка сыҙам үҫемлектәр.* // *Ҡоролок йылдар.* ■ *Элегерәк, бер нисә йыл рәттән королок була. Иген түгел, мал ашарга яраклы үлән дә үҫмәй.* Ә. Вахитов.

**2.** *күсм.* Ҡаты күңеллелек; ҡырыҫлыҡ. *Ахырыһы ул [Людмила Матвеевна], укытыуҙа иң тогро алым — катылык, тигән караштa тора. Талапсанлыкты — катылык һәм королоктан башка күҙ алдына килтерә алмай.* З. Биишева.

**ҠОРОЛОҠЛО** *с.* Яуым-төшөмһөҙ, ҡоро (һауа торошона ҡарата). *Ҡоролокло йәй.* ■ *Урман араһында иң королокло йылда ла үлән һәйбәт үҫә.* Ә. Чанышев. *Көнбайыш Башкортостан республикаһының йылы, ләкин королокло зонаһында ята.* М. Хисмәтов.

**ҠОРОЛОУ** *к. төш. ҡар.* **ҡороу** [2]. *Ҡоролган шаршау. Сатыр королдо. Тоҙак королдо. Кәңәш королдо. План королдо.*

**ҠОРОЛОШ** *и.* **1.** Нәмәнең эске һәм тышҡы урынлашыу тәртибе; төҙөлөш. *Телдең грамматик королошо.*

**2.** Билдәле бер мөнәсәбәткә ҡоролған эске тәртип. *Административ королош. Дәүләт королошо.*

**3.** Ижтимағи мөнәсәбәтте билдәләгән тормош тәртибе. *Ҡол биләүселек королошо. Социалистик королош. Феодаль королош.*

**ҠОРОЛТАЙ** *и. тар.* **1.** Бөтә ил вәкилдәре ҡатнашлығында үткәрелгән ижтимағи-политик йыйылыш; съезд. *Ҡоролтай вәкиле. Ҡоролтай сакырыу. Беренсе дөйөм башкорт королтайы 1917 йылдың 8 декабрендә йыйыла.*

**2.** Илдең вәкәләтле үҙәк идараһы. *Ҡоролтай төҙөү.*

**ҠОРОМ** *и.* Утта янып бөтмәй осҡан бик ваҡ саң сифатындағы матдә. *Кара корoм. Ҡоромга буялыу. Мөрйәнең коромон таҙартыу.* // *Ҡором тоткос.* ■ *Кара резинаның 80 проценты нефть газынан алынган коромдан тора.* Д. Бураҡаев.

● *Ҡаҙандың коромо, кешенең кылыгы йога.* Мәҡәл.

**ҠОРОМЛАНЫУ** *к.* Ҡоромға буялыу, ҡоромло булыу. *Ҡулы коромланган. Ҡоромланган сәйнүк.*

**ҠОРОМЛАУ** *к.* Ҡоромға буяу, ҡоромло итеү. *— Хужа мейес эргәһенә барып, бармагын коромлап килде.* Д. Юлтый.

**ҠОРОМЛО** *с.* Ҡоромға буялған. *Ҡоромло казан.*

**ҠОРОС** *и.* **1.** Тимер менән углерод һәм башҡа элементтар иретмәһенән торған аҡһыл һоро ҡаты металл. *Ҡорос койоусы. Ҡорос иретеү. Ҡорос койоу. Ҡорос сыныктырыу (һугарыу).* // *Ҡорос бысак.* ■ *Ул булат кылысты Урал коросонан үҙебеҙҙең эшсе егеттәр эшләгән.* З. Биишева. *Заводка китте кайһыгыҙ, кайһыгыҙ кырҙа булды; берегеҙ корос кайнатты, берегеҙ иген урҙы.* Р. Ниғмәти.

**2.** *с. мәг. күсм.* Көслө, еңелмәҫ. *Ҡорос Армия.* / Ныҡ, ныҡлы; ҡаҡшамаҫ. *Ҡорос ихтыярлы. Ҡорос тәбигәтле.*

♦ **Күҙҙең коросо ҡайтыу** күҙҙең күреү һәләте кәмеү, көсө бөтөү. *Тагы ла айыу алырһың әле, олатай,— тип йыуатам мин уны.— Юк инде, улым, булмаҫ. Күҙҙең коросо кайтты, беләктең карауы кәмене шул..* Т. Сәғитов. **Ҡорос ағас** *ҡар.* **дардар. Ҡорос ат** (*йәки* **айғыр, арғымаҡ, юртаҡ**) трактор. *Үпкәләмәй башкорт бөгөнгөгә,*

бөтөрзө тип бурыл, саптарҙы. Күрәһегеҙ: нисек йөрөтә ул заман биргән ҡорос аттарҙы. Ш. Бикҡол. **Ҡорос ҡош** самолёт. *Командировкаға йәки курорттарға барған сағында һин самолёт менән бер генә тапҡыр осмағанһыңдыр инде. Шулай ҙа шәп осоусы ҡорос ҡоштар һине һәр ваҡыт һоҡландыра.* Д. Исламов.

**ҠОРОССО** *и.* Ҡорос ҡойоусы. *Белореттың оҫта ҡуллы ҡороссоһо Урал биле бөгөлөрлөк ҡорос ҡойһон.* С. Кулибай.

**ҠОРОҪҠА** *и. диал.* Тышлы тун. *Ҡороҫҡа кейеү.*

**ҠОРОТ** *и.* Эркеттән ҡайнатып яһалған һөт аҙығы (ашҡа ҡатыу һ. б. өсөн ҡулланыла). *Бер баш ҡорот. Ыҫлаған ҡорот. Йәш ҡорот. Ҡорот ылашы. Ҡорот ҡайнатыу. Ҡорот иҙеү. Ҡорот һарҡытыу.* ■ *Аш артынан ҡорот иҙеп ҡатылған, ҡара борос һалынған һурпа бирелде.* Б. Бикбай. **Ҡышҡы ҡорот** ҡышлыҡҡа тип ылашы менән таҕанлы кәбән эсенә тығып ҡалдырылған ҡорот. **Ҡорот ситәне** ҡоротто ҡышлыҡҡа һаҡлай торған үрелгән һауыт.

**ҠОРОТҠОС** [1] *и.* **1.** Яуыз ниәт менән илгә, халыҡҡа зыян килтергән, насарлыҡ эшләгән кеше. *Ҡоротҡостарҙы фашлау.*

**2.** Тәбиғәткә һәм хужалыҡҡа зыян килтерә торған бөжәк, йәнлек йәки ҡош-ҡорт. *Ауыл хужалығы ҡоротҡостары. Урман ҡоротҡостары.* ■ *Ҡоротҡостарҙы сүпләй батырып морон осон, ағас үмерен һаҡлай оҙаҡ йәшәһен өсөн.* С. Муллабаев.

**ҠОРОТҠОС** [2] *и. диал. ҡар.* **киптергес** [2]. *Ҡараны ҡоротҡос менән киптереү.*

**ҠОРОТҠОСЛОҠ** *и.* Яуыз ниәт менән илгә, халыҡҡа зыян килтереү эше. *Ҡоротҡослоҡ итеү.*

**ҠОРОТОЛОУ** *ҡ. төш. ҡар.* **ҡоротоу**. *Ҡоротолған иҙән.*

**ҠОРОТОМШОҠ** *и. һөйл.* Ҡараусыһы булмаған йәтим балаға ҡарата әйтелә.

**ҠОРОТОУ** *ҡ.* **1.** Һыуын, дымын бөтөрөп, ҡоро итеү. *Ҡоротоп алыу.* ■ *Әклимә иҙән ҡорота сепрәген бороп. Буяулы иҙән ҡала ҡоп-ҡоро булып.* Ф. Мөхәмәтйәнов. / Тереклек һутын бөтөрөп, үлe, ҡыу итеү; ҡыуартыу. *Ағас ҡорота ҡуҙҙың яманы.* М. Кәрим.

**2.** Һыу сығанағын, һыу яткылығын юҡ итеү. *Йылғаны ҡоротоу. Күлде ҡоротоу. Шишмәне ҡоротоу.* ■ *Иҫән ҡалған дейеү пәрейҙәре, әҙәм затына ҡалмаһын тип, Тереһыуҙы ҡоротҡан.* «Урал батыр».

**3.** Һауыт эсендәге һыу йәки бүтән нәмәне бөтөрөү. *Шешәләр буш ине, кисә ҡоротоп ҡуйғандар.* Б. Бикбай.

**4.** *күсм.* Юҡ итеү, юҡҡа сығарыу; бөтөрөү. *Дарманды ҡоротоу. Донъяны ҡоротоу. Нәҫелде ҡоротоу. Тереклекте ҡоротоу.* ■ *Ниндәй ҡырмыҫҡа иләүҙәрен ҡороталар! Ҡайҙалыр үрсетергә тырышалар, ә беҙ бында туҙҙырабыҙ.* Я. Хамматов.

♦ **Ауыҙ һыуын ҡоротоп** бик ныҡ һоҡланып, кинәнеп (һөйләгәндә). *Ауыҙ һыуын ҡоротоп һөйләү.*

● *Ярлының ашын бисмилла ҡорота.* Мәҡәл.

**ҠОРОУ** [1] *ҡ.* **1.** Тейешле дымы, һыуы бөтөп, артыҡ ҡороға әйләнеү; кибеү. *Ҡороған ер. Ҡороған тупраҡ.* ■ *Быуындар хәлһеҙләнде. Тел көрмәлгән кеүек тотлоҡто, ҡороп китте.* Һ. Дәүләтшина. / Тереклек һуты бөтөп, ҡыуға әйләнеү; ҡыуарыу. *Ҡороған ағас. Ҡороған ботаҡ.* ■ *Шаулап торған урмандар .. ҡорогандар, йәнһеҙләнгән, үлгәндәр. Яу, яу, тимен, яу, ямғыр.* Ш. Бабич. *Нур күрмәһә, яҙғы гөл дә сәскә сығармай, ҡорой.* А. Игебаев. / Тереклек сифатын юғалтыу, хәрәкәтһеҙ ҡалып зәғифләнеү (тән ағзаларына ҡарата). *Параличтан ҡул ҡороу. Аяҡ ҡороу.* ■ *[Илем], телем ҡороһон әгәр алдаһам, һәм зир-зәбәр килһен бөтә гүмерем, икмәгеңде бушҡа ашаһам.* М. Хәй.

**2.** Һыуы бөтөү, һыуһыҙ ҡалыу; кибеү (йылға, күлгә ҡарата). *Ҡороған йылға. Ҡороған шишмә.* ■ *Элегерәк бында аҙым һайын күл булған, тиҙәр. Тора-бара һыуҙары кәмегән, ситтәрен ҡамыш-күрән баҫҡан. Аҙаҡ килеп улар ҡороған.* Ә. Вәли.

**3.** *күсм.* Юҡҡа сығыу, юҡ булыу; бөтөү. *Тоҡомо ҡороу. Нәҫел ҡороу.* ■ *Ярлы, эшселәрҙең хас дошманы буржуйҙарҙың тамыры ҡороһон.* Ш. Бабич. *Хәби бай Сурағолдо ҡыуып ебәрһә лә, барыбер йәлсемәне, үҙе ҡороно.* Т. Хәйбуллин.

♦ **Бәғер ҡороу** йөрәк һыҙлау, йән әсеү; бик ныҡ ҡайғырыу. **Иҫ-аҡыл ҡороу** бик ныҡ аптырау, хайран ҡалыу. **Иҫең ҡороғор** нимәнелер онотоп торғанда, үртәнгәндә әйтелә. **Ҡороғор** йәки **ҡороп киткер** ҡарғағанда әйтелә. *Аты ҡороғор. Заты ҡороғор.* **Ҡороһон** ниҙелер файҙаһыҙ тип, бушҡа сығарып кәмһетеп әйткәндә ҡулланыла. *[Гөлгәйшә:] Атайыңдың түрә булып йөрөүе ҡороһон — йүнлерәк машина ла тапмаған.* Ш. Янбаев. **Һаһыр ҡороу** нимәнәндер һүрелеү, күңел ҡайтыу. *[Ғариф — Иртәбәков:] — Әллә ҡасан колхозға керә ине Булат, тик үҙең ҡаты бәрелгәнһең уға, һаһыры ҡороған. Ярамай, үҙеңдән оло кеше менән һөйләшә лә белергә кәрәк.* Б. Бикбай. **Теңкә ҡороу** бик ныҡ йөҙәү, йонсоу. *Һеҙҙең кеүек саҡта ат ябағаһынан туп яһап теңкәбеҙ ҡорой торғайны.* Р. Ғабдрахманов.

**ҠОРОУ** [2] *ҡ.* **1.** Ҡаплау, ябыу өсөн элеү. *Сымылдыҡ ҡороу. Тәҙрәгә ҡорма ҡороу.* ■ *Йәш килендәр шаршау ҡорғандар ҙа, парлап, талығып төнөн йоҡлайҙар.* Ғ. Амантай.

**2.** Өҫтән ябып яһау, ултыртыу. *Ҡыуыш ҡороу. Палатка ҡороу. Сатыр ҡороу.* ■ *Аҡмырҙа ҡарауанды туҡтатып, тирмәләр ҡороп ебәргән* (Әкиәттән). / Төҙөү, һалыу (торлаҡ, бина һ. б.). *Завод ҡороу. Йорт ҡороу. Өйгә нигеҙ ҡороу. Йылғаға тирмән ҡороу.* ■ *Окоп түгел, канал ҡаҙа халҡым, доттар түгел, ГЭС-тар ҡорабыҙ.* Ш. Бикҡол. / Билдәле бер тәртиптә йыйып яһау, эшләү. *Оя ҡороу. Йәйләү ҡороп ятыу.* ■ *Лагерь ҡормаҫ борон был урында, бәлки, сәскәләр ҙә булғандыр.* Ғ. Сәләм. *Бөркөт оя ҡормай һаҙлыҡтарҙа.* К. Кинйәбулатова.

**3.** Өлөштәрҙән торған нәмәне эшләрлек хәлгә килтереү, йыйып көйләү. *Радионы ҡороу. Сепараторҙы ҡороу. Фотоаппаратты ҡороу.* ■ *Молотилканы .. трактор менән эшләүгә ҡорғандар.* Б. Бикбай. / Ау ҡоралын һаҡҡа ҡуйыу, тоторға, ауларға көйләү. *Йәтмә ҡороу. Бүрегә ҡапҡан ҡороу. Йәнлектәргә тоҙаҡ ҡороу.*

**4.** Атыу ҡоралын яһаҡлау, атырға көйләү.

*Тупты короу.* ■ *Ҡорҙо мылтыҡты охотник. .. Тине: мин атам ҡуянды, һалдырам гәзиз туның!* Ш. Бабич.

**5.** Булдырыу, барлыҡҡа килтереү, төҙөү. *Ғаилә ҡороу. Гуманистик йәмғиәт ҡороу.* ■ *Ил күкрәһен, ерҙәр тетрәһен илдә яңы тормош ҡорғанда.* Д. Юлтый. *[Батша:] Донъяғыҙҙы ҡороп ебәрер өсөн мин һеҙгә әҙерәк мал бирәм.* «Заятүләк менән Һыуһылыу». / Ойоштороу, йыйып үткәреү (кисә, туй, уйын h. б.). *Кәйеф-сафа ҡороу. Майҙан ҡороу. Мәжлес ҡороу. Кәңәш ҡороу. Табын ҡороу.* ■ *Йәштәр киске уйын ҡорҙолар, ҡоймаҡ бешерҙеләр йәш ҡыҙҙар.* М. Хәй. / Берәй нәмәне нигеҙ итеп алыу, нимәгәлер нигеҙләнеп ойоштороу. *Алдыҡҡа ҡороу. Хәйләгә ҡороу. Эште үҙенсә ҡороу. Уҡытыуҙы яңыса ҡороу.* ■ *Даян үҙ йырҙарының композицияһын .. ҡайһы саҡта эпик сюжетҡа ҡора.* Ғ. Хөсәйенов.

**6.** Уйлап сығарыу, фекерләп билдәләү, төҙөү. *План ҡороу. Хәйлә ҡороу.* ■ *Алғы көнгә тағы бөтмәҫ көстәр йыйып, матур уйҙар мин ҡорам.* Ғ. Амантай. *Әбей ниндәй генә хәйлә ҡорһа ла егетте еңә алмаған* (Әкиәттән).

♦ **Ау (*йәки* ҡапҡан, тоҙаҡ) ҡороу** кемгәлер ҡарата аҫтыртын яуызлыҡ эшләү. **Баҙар ҡороу** күмәк булып тауышланыу, сыр-сыу килеп һөйләшеү.

**ҠОРОУЛЫ** *с.* **1.** Ҡороп, эшләрлек хәлгә килтерелгән, йыйылған (төрлө ҡорал, машина кеүек нәмәләргә ҡарата). *Ҡороулы сепаратор. Ҡороулы машина.*

**2.** Яһаҡ ҡуйылған, ҡоролған (атыу ҡоралына ҡарата). *Ҡороулы мылтыҡ.*

**ҠОРОХТАН** *и.* Көйөлдөләр отрядына ҡараған һаҙ ҡошо; күркәбаш.

**ҠОРО-ҺАРЫ** *и. йыйн.* **1.** Кипкән сыбыҡ-сабыҡ; сытыр. *Ҡоро-һары йыйыу. Ҡоро-һары яғыу.*

**2.** Шыйыҡ булмаған ҡоро аҙыҡ. *Ҡоро-һары ашау.*

**ҠОРОШҠАҠ** *и.* Тәндең, мускулдың ныҡ өшөүҙән, берәй сирҙән йәки башҡа сәбәптән тартышып ҡатыуы. *[Мусаҡай] ҡорошҡаҡты аҙылдырырға теләп, янбашын усы менән ыуырға керешә.* Б. Бикбай. **Ҡорошҡаҡ тотоу** тән, мускул тартышып ҡатыу, ҡорошоу; көҙән йыйырыу. *[Рәмиҙең] ҡул-аяҡтары ҡорошҡаҡ тотҡандай ҡатып, буйһоноуҙан баш тарттылар.* Х. Мохтар.

**ҠОРОШОУ** [1] *ҡ.* **1.** Йыйырылып, ҡыҫылып бәләкәсәйеү; бөрөшөү. *Ҡорошоп ҡалыу. Тире кипеп ҡуйылмағас, ҡорошоп кипкән.* / Өшөп, ҡалтырап бөршәйеү. *Өшөп кенә, ҡорошоп атлаған ап-аҡ сәсле әсәһенә ҡарай Саша.* К. Кинйәбулатова.

**2.** Өшөү, бәрелеүҙән, сир йәки башҡа нәмәнән мускул тартылыу, йыйырылып ҡатыу; тартышыу. *Һыуыҡтан аяҡ ҡороша.* ■ *Көҙгө ел иҫә. Яңаҡтар ҡороша, тештәр шаҡылдай.* С. Агиш.

**ҠОРОШОУ** [2] *ҡ. урт. ҡар.* **ҡороу** [2].

**ҠОРОШТОРОУ** [1] *ҡ.* **1.** Тартыу, йыйырыу (тәндең тиреһен). *Кер һабыны ҡулдың тиреһен ҡороштора.*

**2.** Өшөтөп бөршәйтеү, көжөрәйтеү. *Ҡырҡ градуслы һыуыҡ тәнде ҡороштора.* «Совет Башҡортостаны», 1970, 6 сентябрь.

**3.** *әйһ. ф. ҡар.* **ҡорошоу** [1] 2.

**ҠОРОШТОРОУ** [2] *ҡ.* Арлы-бирле ялғап ҡороу. *Халыҡ эркелеп, оҙон таҡталарҙан ҡорошторған сәхнә һымаҡ урынға ҡарай ағылды.* И. Насыри.

**ҠОРСАЙЫУ** *ҡ. диал.* Аптырауҙан, ғәжәпләнеүҙән яурынды бөксәйтеү.— *Мин йоланы белмәйем, эш аҙағын күрмәйем, аҙаҡ барһам барырмын, ҡыҙҙы эҙләп табырмын [тип] .. Урал кире ҡаҡҡан ти. Аҡһаҡалдар ҡорсайып ҡыҙға әйтә киткән ти.* «Урал батыр».

**ҠОРСАҢҒЫ** *и.* Кеше йәки хайуан тәненә ошо ауырыуҙың талпаны инеүе арҡаһында, сабыртып йәки башҡа төрлө булып барлыҡҡа килгән, ныҡ ҡысыттыра торған йоғошло тире ауырыуы. *Ҡоро ҡорсаңғы. Һыулы ҡорсаңғы. Ҡорсаңғы йоғоу. Ҡорсаңғы төшөү. Ҡорсаңғы баҫыу.* // *Ҡорсаңғы ат.* ■ *Мәхмүттең ҡорсаңғы алашаһы .. осраған бер атҡа туҡтала ҡашыtypға үҙенең арҡаһын.* С. Ҡудаш. *Ҡорсаңғыны зарарлы талпандар тарата. Уларҙың кешегә лә ҡаҙалыуы бар.* В. Ғүмәров. *Ҡола бейә .. ҡорсаңғыһын ҡағып алыу өсөн генә ауынаған да, быҙа-быҙа аяҡтарын атындырып, ялдарын ялбыратып, икенсе яғына әйләнер һымаҡ ята.* Т. Килмөхәмәтов.

● *Ҡорсаңғы ат эйәр һалдырмаҫ.* Мәҡәл. *Ҡорсаңғы атты себен дә талай.* Әйтем.

**ҠОРСАҢҒЫЛАУ** *ҡ.* Ҡорсаңғы йоҡтороу, ҡорсаңғыға әйләнеү, ҡорсаңғы булыу. *Ҡорсаңғылап йөрөү.*

**ҠОРСОЙ** *и. диал.* **1.** Ҡорсаңғы.

**2.** *ҡусм.* Ҡулынан эш килмәһә лә маҡтанған кешегә мыҫҡыллап әйтелә.

**ҠОРСОТОУ** *ҡ.* Нимәгәлер теләк уятыу, ҡыҙғытыу, ҡотортоу. *Балаларҙы ҡорсотма, үҙегеҙ барығыҙ.*

**ҠОРСОУ** *ҡ.* Ниҙелер эшләргә ҡыҙышыу; ярһыу. *Шүлгән быны күргән һуң бик ҡорсоған, түҙмәгән, эсенән бик һыҙланған.* «Урал батыр».

**ҠОРТ** [1] *и.* **1.** Бөжәктең йомортҡанан сыҡҡан селәүсен һымағыраҡ балаһы; ҡарышлауыҡ. *Кәбеҫтә ҡорто. Япраҡ ҡорто. Ағас ҡорто. Ебәк ҡорто. Йөнлө ҡорт.* / Ҡанатһыҙ һәм күпселеге аяҡһыҙ төрлө бөжәктәрҙең дөйөм исеме. *Ярмаға ҡорт төшкән.* ■ *Ҡабырғаһын ҡорт йырып, ҡара күҙен ҡарға соҡоп, .. ил ярлыһы өсөн ир башҡорттар ҡайҙа сереп ҡалмаған.* Т. Хәйбуллин. /*ҡусм.* Нимәгәлер тас йәбешеп йәшәгән кешегә ҡарата әйтелә. *Китап ҡорто.* ■ *Ишекте ҙур асып, кибет тотоусы ҡарт капитал ҡорто Шәрәфиҙең ҡатыны Зәйнәп килеп инде.* Ш. Шәһәр.

**2.** **(*йәки* бал ҡорто)** Яры ҡанатлылар төркөмөнә ҡараған, нәҙек билле бал йыя торған бөжәк. *Бал ҡорто. Инә ҡорт. Эшсе ҡорт. Эре ҡорт. Кейек ҡорт. Ҡорт ағыуы. Ҡорт күсе. Ҡорт ҡаяуы. Ҡорт сағыу. Ҡорт айырыу. Ҡорт ҡуныу. Ҡорт һарытыу.* ■ *Бер йәй эсендә бер ҡорт күсе сирек миллиардҡа яҡын сәскәнән бал йыя.* «Ағиҙел», 1967, № 3.

♦ **Ер ҡорто** тик тормаған, үткер, сая балаға әйтелә. **Көплө ҡорт** 1) бөжәк ҡурсағы; 2) йылы ваҡытта ла ҡалын итеп кейенеп алған, өҫтөн һалмаған кешегә ҡарата әйтелә. **Ҡүҙ ҡорто** *диал. ҡар.* **ҡүҙ. Ҡара ҡорт** Урта һәм Үҙәк Азия сүлдәрендә осрай торған ҡара бәрхәт төҫөндәге бәлә-

кәй генә ағыулы үрмәксе. **Ҡорт саҡҡыры** әрләгәндә әйтелә. **Ҡорт үләне** *ҡар.* үлән [1]. **Һоро ҡорт** *ҡар.* 1) әре ҡорт; 2) кеше елкәһен ашап, иҙеп, эшләмәй ятҡан кешегә ҡарата әйтелә. *Башҡорт араһына төрлө әрәм тамаҡтар, һоро ҡорттар килеп тулды.* Т. Йәнәби.

● *Алманың аҫылын ҡорт ашай.* Әйтем. *Йомшаҡ ағасты ҡорт баҫа.* Әйтем. *Тымыҡ күлдә ҡорт уйнар.* Мәҡәл. *Эҙләгән ҡорт бал табыр, эшләгән ир мал табыр.* Әйтем.

**ҠОРТ** [2] *и. иҫк.* Бүре. *[Йосоптоң ағалары:] Аһ! Ул ерҙә бер яуыз ҡорт бар имеш. Хәкикәт, Йосопто шул ҡорт еймеш.* «Йосоп вә Зөләйха».

**ҠОРТАҢЛАУ** *ҡ. диал.* Ҡыйпысыҡланыу. *Улар яҡшылыҡҡа өйрәтә, тиһеңдер инде, байғош. Ир-ат араһында ҡортаңлап йөрөргә өйрәтерҙәр шунда.* Һ. Дәүләтшина.

**ҠОРТБАШ** *и. иҫк.* Биҙәү нәмәһе итеп ҡулланылған ваҡ ҡына аҡ диңгеҙ ҡабырсығы. *Йәш баланы күҙҙән һаҡлау өсөн ҡортбаш таға инеләр.* ■ *Мәғфүрә ҡыҙының ҡалай тәңкәләрҙән ситенә ҡортбаш теҙеп яһалған быҙау телендәй генә иҙеүсәһен уға һалындырғас, Хаят та ҡыҙыҡты.* Һ. Дәүләтшина.

**ҠОРТҠА** *и. диал. ҡар.* **әбей** 3. *[Бабай] баланы алып ҡайтып ҡортҡаһына бирә. Әбей ул баланы яҡшы итеп йыуа, ашатып эсерә* (Әкиәттән).

**ҠОРТ-ҠУҢЫҘ** *и. йыйн.* Төрлө ҡорт һәм ҡуңыҙ. *Арҙаҡлап көткән аҡ тәнең ҡорт-ҡуңыҙға ем булыр* (Ҡобайырҙан).

**ҠОРТЛАНЫУ** *ҡ.* Төрлөсә ҡыланыу; ҡыланһыҡланыу.

**ҠОРТЛАТЫУ** *ҡ.* Ҡортлоға әйләндереү, ҡортло итеү. *Итте ҡортлатыу.*

**ҠОРТЛАУ** *ҡ.* Ҡортлоға әйләнеү, ҡортло булыу. *Ҡортлап китеү. Малдың ҡортлаған ерен дауалағанда, йәшел һәңгәр һалалар, дегәнәк япрағы төйөп бәйләйҙәр.* Һынамыш.

♦ **Эт аяғы ҡортлаған ер** халыҡ ҡайнап торған ер. **Эт аяғы ҡортлаған саҡ** халыҡ ҡайнап торған саҡ. **Эт ҡолағы ҡортлаған саҡ** бик эҫе саҡ. *[Әбей:] Ҡуй, балаҡай, эт ҡолағы ҡортлаған саҡта толоп кеймәһәң!* Р. Ғабдрахманов.

● *Ит үҙенән-үҙе ҡортлай.* Мәҡәл.

**ҠОРТЛО** *с.* **1.** Ҡорто булған, ҡорт төшкән. *Ҡортло алма. Ҡортло ағас.*

**2.** *күсм. һөйл. мыҫҡ.* Тик тормаҫ (балаға ҡарата). *Ҡортло ҡыҙыҡай.*

**ҠОРТЛОҠ** *и. диал.* Умарталыҡ.

**ҠОРТМАН** *и. диал.* Ҡортбаш.

**ҠОРТОМ** *и. ҡар.* **ҡуртым.**

**ҠОРТСО** *и. ҡар.* **умартасы.** *Бер көн ҡортсо ҡарт солоҡтарын ҡарап йөрөгәндә бер ир баланы осратҡан* (Әкиәттән).

**ҠОРТСОЛОҠ** *и. ҡар.* **умартасылыҡ.** *Ҡортсолоҡ менән шөғөлләнеү.* ■ *Башҡорт балы өҫтәлдән төшмәһен өсөн, ҡортсолоҡ буйынса белгестәр әҙерләргә, умарталар эшләү мастерскойын булдырырға кәрәк.* «Совет Башҡортостаны», 1980, 4 июнь.

**ҠОРҺАҠ** *и.* **1.** Йән әйәләренең эс-бауыр ятҡан урыны; эс. *Ҡорһаҡ ҡыуышлығы.* / Шул урындың тышҡы булмышы. *Йыуан ҡорһаҡ. Ҡорһаҡ аҫты. Ҡорһаҡ шиңеү. Ҡорһаҡ үҫтереү.* ■ *«Нишләп ятаһың, егет?» — тип бирәү ҡорһаҡҡа төрттө.* С. Агиш. **Апара ҡорһаҡ** йыуан ҡорһаҡ. **Күп ҡорһаҡ** *шаяр.* ҙур ҡорһаҡлы. **Ҡап ҡорһаҡ** 1) йыуан ҡорһаҡлы кеше; 2) *күсм.* бай кеше. **Таш ҡорһаҡ** күп ашаған ҙур эсле кешегә әйтелә.

**2.** Аш үҙләштерә торған ағза; ашҡаҙан. *Ас ҡорһаҡ. Тук ҡорһаҡ.* **Ҡорһаҡ асыу** асығыу, асыҡтырыу. *Өҙөлөп-өҙөлөп ҡорһаҡ асты, ашағы килә, .. оҙаҡ итеп йоҡлағы килә.* Д. Юлтый. **Ҡорһаҡты нығытыу** *һөйл.* ашап туйыу. *Киске аш ашап, ҡорһаҡты нығытып алдыҡ та, Сәлмән ағай менән паркка киттек.* Т. Йәнәби.

**3.** Ҡатын-ҡыҙҙың ауыры, буйындағы йөгө. *Зәһир мулла [Зәйнәпте] үҙе көсләгән дә, ҡорһағы беленә башлағас, ҡыуып сығарған.* А. Карнай. *Ҡыҙ таҙҙан йөклө булып ҡалған, ти. Был ҡорһағын ул туғыҙ ай урынына бер ай, туғыҙ көн урынына бер көн күтәреп, бала тапҡан, ти* (Әкиәттән). **Ҡорһаҡ төшөрөү** бала төшөрөү; аборт яһау. **Ҡорһаҡҡа ҡалыу** *йәки* **ҡорһаҡ күтәреү** ауырға ҡалыу, гөманлы булыу. *Һыуҙың ҡыҙы Һыуһылыу ҡорһаҡ күтәреп, бер ир бала тапҡан, ти.* «Заятүләк менән Һыуһылыу».

**4.** Төрлө нәмәнең ҡабарып торған ҡабырғаһы. *Сәйнүк ҡорһағы.* ■ *Матур ғына аҡ мендәрҙәр ҡорһаҡтары күпсеп ята.* Ғ. Дәүләтшин.

♦ **Бирән ҡорһаҡ** 1) ашап туймаҫ мәскәй; 2) аҡсаға, малға туймаҫ ас күҙ. **Йыуан ҡорһаҡ** кеше хаҡын ашаған бай. *Ҡандары ҡомарып, яралары тоҙланып килгән йыуан ҡорһаҡтар был һүҙҙе ишеткәс, ярыла яҙҙылар.* Ғ. Дәүләтшин. **Ҡара ҡорһаҡ** ашауға әрһеҙ, талымһыҙ кеше.— *Бата ул [ыумас] беҙҙең кеүек ҡара ҡорһаҡҡа.* Х. Ғиләжев. **Ҡом ҡорһаҡ** *диал.* 1) ташбаш; 2) эсе йыуан, һимеҙ кешегә ҡарата әйтелә. **Ҡорһаҡ кереү** бик шәп кеше булып маһайыу. *Ҡорһаҡ кереп йөрөү.*

**ҠОРҺАҠЛЫ** *с.* Балаға ҡалған; ауырлы, гөманлы. *Ҡорһаҡлы ҡатын. Ҡорһаҡлы булыу.*

**ҠОРШ** *окш.* Йылҡының танау төбөнән сыҡҡан тауышты белдергән һүҙ. *Корш итеү.* ■ *Турысай ҙа танауын корш тартып, бер-ике үрәпсене лә, Ҡамышлы һыуы буйына бәреп сығып китте.* Т. Хәйбуллин.

**ҠОРШАЙЫУ** *ҡ.* Ҡурҡыуҙан йәки ныҡ өшөүҙән ҡалтырап, йомарланыу; бөршәйеү. *Ҡоршайып ултырыу.*

**ҠОРШАЙЫШЫУ** *ҡ. урт. ҡар.* **ҡоршайыу.** *Мәктәп, халыҡса әйткәндә, эт бәйләһәң торғоһоҙ. Балалар өшөп, ҡоршайышып ултыра.* З. Биишева.

**ҠОРШАЛЫУ** *ҡ. төш. ҡар.* **ҡоршау** [1]. *Ҡоршалған сынаяҡ. Ҡоршалған мискә.* ■ *[Айнур] эштән ҡайтһа, күрше подъезд тапҡырында машинанан мебель бушатып торалар. .. Һәр әйбер ҡатырға менән көпләп, ағас рейкалар менән ҡоршалған.* Н. Мусин.

**ҠОРШАНЫУ** *ҡ. диал. ҡар.* **бөркәнеү** 2.

**ҠОРШАУ** [1] *ҡ.* **1.** Нимәнеңдер өлөштәрен, ярсыҡтарын йыйып яһау, ялғап бер бөтөн итеү. *Мискәне ҡоршау. Ватылған сынаяҡты ҡоршап ҡуйыу.*

**2.** Берәй нәмә менән тирәләп уратыу, әйләндереп алыу. *Таш менән ҡоршап ҡуйыу.* ■ *Беҙҙең тирә-яҡты урап алып, ҡоршап торҙо ҡара ҡоймалар.* «Башҡорт сәсәндәре», 1953.

**ҠОРШАУ**[2] *и.* **1.** Нимәлер эшләгәндә уның өлөштәрен йыйып ҡыҫа, нығыта торған дүңгәләк, бөгәзе. *Агас ҡоршау. Тимер ҡоршау. Тәгәрмәс ҡоршауы.* ■ *Ҡарт .. ҡорғаҡһыған мискәгә ҡоршау һуғып маташа ине.* З. Биишева. / Шуға оҡшаған, шуның вазифаһын үтәгән нәмә. *Түмгәк түҙ ҡоршауы ярҙамында ғына таралмай һаҡланып ҡалған.* Я. Хамматов. **Ҡоршау һуғыу** ҡоршау менән нығытыу, беркетеү.

**2.** Тирә-яҡтан уратып алып, инер, сығыр юлды бикләгән, япҡан нәмә тураһында; ҡамау. *Ут ҡоршауы. Ҡоршауға алыу. Ҡоршау эсендә ҡалыу.*

**3.** *күсм.* Итәк осона баҫылған таҫма. *Ҡоршау һалып күлдәк тегеү.*

**ҠОРШАУЛАУ** *ҡ.* **1.** Ҡоршау, бөгәзе кейҙереү; ҡоршау һуғыу. *Мискәне ҡоршаулау. Ҡоршаулаған көрәгә.*

**2.** Берәй нәмә менән уратып, әйләндереп алыу. *Еребеҙҙәге тимерҙе иретеп ҡойһаң барын, ҡоршауларға етер ине меҡ ҡабат ерҙеҡ шарын.* С. Ҡудаш.

**ҠОРШАУЛЫ** *с.* Ҡоршап ҡуйылған, ҡоршау, бөгәзе һуғылған. *Ҡоршаулы мискә. Ҡоршаулы сәйгүн.* ■ *Хисмәтулла ҡоршаулы һынайғындағы һыуыған сәйҙе һемереп эсте.* Я. Хамматов.

**ҠОРШ-ҠОРШ** *оҡш.* Ҡабат-ҡабат ҡорш иткән тауышты белдергән һүҙ. *Ҡорш-ҡорш итеү. Ҡорш-ҡорш килеү.*

**ҠОРШОЛДАТЫУ** *ҡ.* Ҡорш-ҡорш иттереү, ҡорш-ҡорш килтереү. *Ат танауын ҡоршолдата.*

**ҠОРШОЛДАУ** *ҡ.* Ҡорш-ҡорш итеү, ҡорш-ҡорш килеү. *[Толпар] Ҡуҙыйкүрпәс ятҡан ерғә етер-етмәҫтән ял-ҡойроғон текә сәнсеп, үйнаҡлап, ҡоршолдап, кире китте!* «Ҡуҙыйкүрпәс менән Маянһылыу».

**ҠОСАҠ** *и.* **1.** Кемделер иркәләгәндә йәки һөйгәндә уратып алған ике ҡул араһы. *Ҡосаҡ йәйеү. Ҡосаҡҡа алыу. Ҡосаҡҡа инеү.* ■ *Әҫе ҡосаҡтарҙа бер минутҡа юғалтҡандар улар уйҙарын.* Ғ. Сәләм.

**2.** Ҡаушырылған ике ҡул араһына һыйышлы күләм үлсәү самаһы. *Бер ҡосаҡ бесән. Ике ҡосаҡ утын.*

**3.** *күсм.* Солғаныш, урата (тәбиғәт күренешенә, тормошҡа бәйле төрлө хәлдәргә ҡарата). *Диңгеҙ ҡосағы. Көрәш ҡосағы. Тормош ҡосағы. Үлем ҡосағы. Ялҡын ҡосағы.*

**ҠОСАҠЛАТЫУ** *ҡ.* Ҡосаҡларға ирек ҡуйыу.

**ҠОСАҠЛАУ** *ҡ.* **1.** Ҡосаҡ эсенә алыу (иркәләү, һөйөү өсөн). *Муйындан ҡосаҡлау. Ҡыҫып ҡосаҡлау. Ҡосаҡлап алыу. Ҡосаҡлап көрәшеү.* ■ *Хәйҙәр Сәгиҙәне биленән ҡосаҡлап, үбергә тотондо.* М. Тажи. *Эреҫ әбей .. бөтә донъя малын ҡосаҡлап алырҙай була.* Ғ. Дәүләтшин. *Ер шарын ҡосаҡлар инем, их, ҡосағыма һыйһа! Шундай матур был донъя!* А. Игебаев. / Ике ҡул менән уратып тотоу. *Әхмәҙулла бабай ике тубығын ҡосаҡлап ерғә ултырҙы.* Ә. Вахитов. *Мендәркәйен ҡосаҡлап, бер ҡыҙ илай, Зөлхизә, һөйгән егеткәйем дә юҡ-юҡ тип, Зөлхизә.* (Халыҡ йырынан). / Ҡосаҡҡа алып күтәреү. *Гармун ҡосаҡлап йөрөү. Утын ҡосаҡлап инеү.* ■ *Кешеләр сумаҙан-кәрзиндәрен ҡосаҡлап, вагондарға инә башланы.* Т. Йәнәби.

**2.** *күсм.* Таралып, йәйелеп биләү, уратып алыу, солғау. *Көн һүнде. Донъяны ҡуңыр сәсле төн ҡосаҡланы.* Ш. Шәһәр.

**ҠОСАҠЛАШЫУ** *ҡ. урт. ҡар.* **ҡосаҡлау 1.** *Ҡосаҡлашып күрешеү. Ҡосаҡлашып ултырыу.* ■ *Бүре менән ҡуян ҡосаҡлашҡан, самаларҙан ашҡан самалар .. Ҡыуанышыр бала-сағалар.* М. Кәрим.

**ҠОСОУ** *ҡ. шиер.* Ҡосаҡлау. *Иң күркәм тау ҡайһы тау, тип, Агиҙелдән һораным; Агиҙелкәй наҙлай-наҙлай һине ҡосто, Уралым.* А. Игебаев. *Елдәр иҫһә, болоттарҙы болот ҡоса.* М. Ғасыров.

● *Атаһына ҡарап улын ҡос, әсәһенә ҡарап ҡыҙын ҡос.* Әйтем.

**ҠОСУР** [*ғәр.*] *и. иҫк.* Кәмселек; етешһеҙ яҡ. *Асылды был донъяға яңы бер нур, .. булманы был йәһәттән беҙҙә ҡосур!* М. Ғафури.

**ҠОҪҠОЛОҠ** *и.* Ҡоҫҡан нәмә; ҡоҫоҡ.

**ҠОҪҠОНОС** *с. ҡар.* **ҡоҫторғос.** *Ниндәйҙер ҡоҫҡонос нәмә йотҡан кеүек, уның [Зиннәттең] күңеле болғана ине.* Х. Мохтар.

**ҠОҪОҠ** *и.* Ҡоҫҡан нәмә; ҡоҫҡолоҡ.

**ҠОҪОР** *и. ҡар.* **ҡоһор.**

**ҠОҪОУ** *ҡ.* **1.** Һеңмәгән ашты йәки бүтән нәмәне ауыҙ аша ашҡаҙандан сығарыу. *Ҡоҫҡо килеү. Ҡан ҡоҫоу. Үт ҡоҫоу.* ■ *Ни өсөн күңел болғанғанын үҙе генә аңлаған Сәриә яуап ҡайтарманы, ашағанын аҡтарып-аҡтарып ҡоҫто.* Я. Хамматов.

**2.** *күсм.* Өҙләкһеҙ ҡойолоп йәки төшөп тороу; яуыу. *Суйын ҡоҫа домналар.* ■ *Шул ете тау артында, Белоруссия иләндә, тап Полесье күгендә ҡара ҡоштар осҡанын, ерғә бомба ҡоҫҡанын күреп торҙо Урал тау.* Р. Ниғмәти.

**3.** *күсм.* Тимергә тейеп, тимер туты сығыу. *Тимер һауытта һөт ҡоҫҡан.*

◆ **Баш ҡоҫоу** башаҡ ебәреү, башаҡланыу. *Игендәр баш ҡоҫа. Башаҡлы үләнде баш ҡоҫҡанда сапһаң, бесәне һәйбәт була.* ■ *Бөгөн Булат, тәжрибә ашлыҡтарын күреп, бик шатланды: бойҙай өлгөрөп килә, һоло баш ҡоҫҡан, тары ла бик һәйбәт.* Ш. Насыров.

**ҠОҪОШОУ** *ҡ. ҡар.* **ҡоҫоу** 3. *Ҡорот ҡойған ҡаҙанға һөт һалмағыҙ, ҡоҫошор* (Сеңләүҙән).

**ҠОҪТОРҒОС** *с.* Ҡоҫҡоно килтергес; ҡоҫтора торған. *Ҡоҫторғос дарыу.*

**ҠОҪТОРОУ** *ҡ.* **1.** *йөкм. ҡар.* **ҡоҫоу** 1. *Үтте ҡоҫтороу.*

**2.** *күсм.* Үҙләштергәнде кире ҡайтартыу. *[Сурагол — байға:] Һинең йылҡыңа минең хәләл көсөм ингән. Уны йоттормам. Бөгөн булмаһа, иртәгә ҡоҫторормон.* Т. Хәйбуллин.

◆ **Ҡортон ҡоҫтороу** 1) эт, бесәй балаһына әсе ҡатыҡ эсереп, йәнәһе, эсендәге ҡортон сығартыу; 2) аҡылға ултыртыу, кәрәген биреү. *Ғибат менән үҙебеҙ һөйләшербеҙ. Уның ҡортон ҡоҫторорға ғына ҡулдан килер.* Н. Мусин.

● *Аш хурлама — ҡоҫторор, ир хурлама — боҫторор.* Мәҡәл.

**ҠОТ** *и.* **1.** Тереклек, именлек бирер нәмә; йән. *«Алла!» — тигән бер тауышҡа бик яман терт итеп киттем, ҡотом да ҡалмаған.* Ш. Бабич.— *Салауаттан ҡурҡып осҡан ҡот әле һаман ҡатманымы һиңә? — .. ти Мәргән.* Ә. Чаныш.

**2.** Күңелгә кинәнес, рәхәтлек биргән сифат;

йәм, нур. *Өй ҡото. Тормош ҡото.* ■ *[Старшина:] Ауыл уртаһына ситән өй һалдырып, урамдың ҡотон ебәреп булмаҫ.* Ғ. Дәүләтшин. *Ирәндекәй тауҙың ҡото булып, кемдәр ҡалыр икән беҙҙән һуң?* (Халыҡ йырынан).

**3.** Уңыш, бәхет килтергән нәмәгә ҡарата әйтелә. *[Бабай хәнйәрҙе] һунар ҡото китер тип, һатманым ти.* Ҡ. Даян. *Ҡул шаулатып, һыу ярып, ерҙә дауыл ҡуптарып, Аҡбуҙ сығыр, мал ҡото, бөтә малдан һуң ҡалып — сабыр итеп шуны көт.* «Заятүләк менән Һыуһылыу». **Ҡот ҡуныу** уңыш, муллыҡ килеү, ҡотайыу.

**4.** *иҫк.* Ҡурҡҡан кешене имләр өсөн ҡурғаштан ҡойоп, муйынға, түшкә таҡҡан нәмә. *Ҡот тағыу.* **Ҡот ҡойоу** ҡурҡып ауырыған кешене имләү ырымы (кешенең башына әйбер ябалар, бер туҫтаҡ һыуҙы уны тирәләй өс тапҡыр әйләндереп, баш өҫтөнә тоталар; иретелгән аҡ ҡурғашты уҡына-уҡына туҫтаҡтағы һыуға ҡоялар; ҡурғаш ниндәй йәнлек рәүешенә килеп ҡатһа, кеше, йәнәһе, шул нәмәнән ҡурҡҡан була; ҡурғашты кешенең муйынына йәки кейеменә тағып ебәрәләр). **Ҡот төшөү** боронғо хөрәфәт буйынса, ҡот ҡойғанда ауырыу нимәнән ҡурҡһа, шул нәмәнең һүрәте ҡурғашта һүрәтләнеү (имештер, әгәр һүрәте төшһә, ауырыу төҙәлә).

◆ **Ҡот алыныу** ныҡ ҡурҡыу. *Ҡото алынған Ғәмилә илай ҙа алмай .. ҡатып ҡалды.* Б. Бикбай. **Ҡотто алыу** ныҡ ҡурҡытыу. *[Миронов:] Ҡыҙыҡайҙың ҡотон алдың, ҡалтырап төштө, меҫкенкәй.* Н. Иҙелбай. **Ҡот ҡубыу** *ҡар.* **ҡот осоу** 1. **Ҡот осҡос** бик ҡурҡыныс; бик яман, иҫ киткес. *Ҡот осҡос ваҡиға. Ҡот осҡос тауыш. Ҡот осҡос хәл.* ■ *Ҡамыр батыр алдына ҡот осҡос дейеү килеп тә баҫҡан* (Әкиәттән). **Ҡот осоу** 1) бик ныҡ ҡурҡыу. *Хөрмәт ағайым ҡото осоп һикереп торҙо.* Н. Ғәлимов; 2) ныҡ ҡурҡыуҙан ауырыуға әйләнеү; ауырыуға һабышыу. *Баланың ҡото осҡан бит, ҡот ҡойорға кәрәк.* **Ҡот сабыу** *этн.* ҡыҙҙы оҙатҡанда башҡарыла торған боронғо туй йолаһы (ҡыҙҙы оҙатҡанда, арбаға ултырып сыҡҡас, ҡыҙҙың яҡын ағаһы туйыҙға йәки көршәккә ҡаймаҡ һалып алып, һыбай ҡаса; ҡыҙ яғы менән егет яғы кешеләр уның артынан сабып, көршәкте алырға тырыша; егет яғы көршәкте алһа, ҡоҙағый арбаһына килтереп һуға — ҡот кейәү менән китә; ҡыҙ яғы алһа, ҡыҙ арбаһына килтереп һуға — ҡот ҡыҙҙа була).

● *Ҡул араға ҡул керһә, йорт эсенә ҡот керә.* Мәҡәл. *Эшләгән эш — ирҙә ҡот.* Мәҡәл. *Яңғыҙ тирәк илгә ҡот бирмәҫ.* Мәҡәл.

**ҠОТАЙТЫУ** *ҡ.* Уңыш һәм муллыҡ килтереү; байытыу, уңдырыу. *Өҫтө-башын бөтәйткән, аҙамат итеп ҡотайтҡан ирҙең күрке мал булыр* (Ҡобайырҙан).

**ҠОТАЙЫУ** *ҡ.* **1.** Етеш көнгә сығыу; байыу, уңыу, йәлсеү. *Көнө килде. Сереп ук байымаһа ла, йылдар бәрәкәтәйгәс, ныҡ ҡотайҙы, ныҡ бөтәйҙе Талип.* М. Кәрим. *Ҡасан ғына яңғыҙ атҡа ҡотая алмаған ярлы крәҫтиән ине Хәбирйән Богданов, хәҙер мул тормошло колхозсы, үҙ аҡсаһына самолёт алып тыуған Армияһына бүләк итә.* Б. Бикбай. *Бахыр килен ашап, ашҡа туймаған, кейеп, кейемгә ҡыуанмаған, донъя көтөп, донъяһы ҡотаймаған* (Әкиәттән).

**2.** Йәм өҫтәлеү, йәнләнеү. *Тормош ҡотайҙы. Балалар ҡайтҡас, өй ҡотайып китте.*

● *Биҙәү бисә бикә булһа, ил ҡотаймаҫ.* Мәҡәл.

**ҠОТАН** [1] *и. иҫк.* Күрк, йәм, ҡот. *Атлас кейем кейгән, юрға менгән — әммә илә егет ҡотаны* (Халыҡ йырынан).

**ҠОТАН** [2] *и.* Ситәндән түңәрәкләп үргән ҡуй-һарыҡ аҙбары.

● *Ҡотанда ҡуй ҡырылһа, ҡотыр кәзә баш булыр.* Мәҡәл.

**ҠОТАН** [3] *с. диал.* **1.** Наҡыҫ. *Быйыл иген ҡотан булды, сөнки ямғыр ваҡытында яуманы.*

**2.** Мәскәй. *Көнө-төнө ашай ҡотан, туймай тамағы.* Б. Бикбай.

**ҠОТАНЫУ** *ҡ. диал.* Ҡотайыу.

**ҠОТҠАРЫЛЫУ** *ҡ. төш. ҡар.* **ҡотҡарыу.** *Ҡотҡарылған ҡала. Бәләнән ҡотҡарылыу. Хеҙмәттән ҡотҡарылыу.*

**ҠОТҠАРЫУ** *ҡ.* **1.** Азатлыҡҡа сығарыу, ирекә ебәреү; азат итеү. *Ҡотҡарып алыу.* ■ *— Дейеүҙе мин үлтерҙем, батша ҡыҙын мин ҡотҡарҙым* (Әкиәттән). / Дошман ҡулынан кире ҡайтарыу; кире алыу. *Ҡырҡ өсөнсө йылдың йәйе. .. Беҙҙең гәскәр фашистар ҡулынан яңынан-яңы ҡалаларҙы ҡотҡара.* Н. Мусин.

**2.** Ауыр хәлдән йырындырыу; ҡотолдороу. *Ауырыуҙан ҡотҡарыу. Аслыҡтан ҡотҡарыу. Бәләнән ҡотҡарыу.* ■ *Һуғарырҙай булам бер минутта Ленин аңы менән халҡымды, ҡотҡарырҙай булам наҙанлыҡтан яфаланған ярлы ялпымды.* Т. Йәнәби. / Ауыр хәлдән ҡурсалап алып ҡалыу. *Ғәйептән ҡотҡарыу. Үлемдән ҡотҡарыу.*

**3.** Эш, бурыстан буш итеү; бушатыу. *Хеҙмәттән ҡотҡарыу.* ■ *— Ниңә, бик яҡшы булған. Шул арҡала беҙҙе занятиенан ҡотҡарҙылар.* Д. Юлтый. / Буш ебәреү, буш ҡалдырыу. *Яноҙаҡ тигән бик данлы бер һунарсы булған, атһа, ҡош, сапһа, йәнлек ҡотҡармаған.* Б. Бикбай. *Ишетеп ҡалған һәр яңы һүҙҙе ҡотҡармай торған сағы ине баланың.* К. Мәргән.

**ҠОТҠАРЫШЫУ** *ҡ. урт. ҡар.* **ҡотҡарыу.**

**ҠОТҠО** *и.* Коллективта, кешеләр араһында тарҡатыу эше алып барыу, кешеләр араһын боҙоу һ. б. өсөн һөйләнгән һүҙ. *Ҡотҡо биреү. Ҡотҡо йөрөтөү. Ҡотҡо таратыу. Ҡотҡоға төшөү.* ■ *[Шөкөр:] Һин ҡоторттоң беҙҙе! Ҡотҡо һалған өсөн һинең үҙеңде яуапҡа тарттырырға кәрәк, һәрһөп бөткән капитализм ҡалдығы!* М. Кәрим. *Кеше ҡотҡоһона бирелеп, айырылыштыҡ юҡҡа беҙ.* Б. Вәлит.

◆ **Шайтан ҡотҡоһона төшөү** көтмәгән бер насар эш ҡылыу.

**ҠОТ-ҠОН** *и. йыйн.* Ҡот, йәм биргән төҫ; йәм-тәм. *[Ирназаров:] Кейергә йүнле-рәтле кейем юҡ, ашаған аштың ҡото-ҡоно юҡ.* А. Карнай.

**ҠОТҠОРО** *с. диал.* Кире, тиҫкәре. *Ҡотҡоро кеше.*

**ҠОТҠОСО** *и.* Ҡотҡо йөрөтөүсе; ҡотҡо таратыусы.

**ҠОТ-ҠОТ** *оҡш.* Әтәстең емгә тауыҡ саҡырған тауышын белдергән һүҙ. *Ҡот-ҡот итеү.* ■ *Өй алдында тибенеп йөрөгән йолҡош ҡойроҡло ҡара әтәс бер нисә тапҡыр ҡот-ҡот тине лә, ситкә тайпылды.* Ә. Вәли.

**ҠОТЛАТЫУ** *к. йөкм. кар.* **ҡотлау** [1] 1—3. *Өй ҡотлатыу. Байрам менән ҡотлатыу.*

**ҠОТЛАУ** [1] *к.* **1.** Ҡәнәғәтлек, ҡыуаныс белдереп хуплау; тәбрикләү. *Һандуғастар иҫ киткес серле көйҙәрен көйләйҙәр, яңы көндө ҡотлайҙар.* И. Көҫәпҡол. *Мин дә беләм беҙҙең илебеҙҙең ныҡлы семъяларҙы ҡотлауын.* Ғ. Сәләм.

**2.** Ниндәйҙер ваҡиға уңайы менән теләктәшлек, яҡшы теләктәр, шатлыҡ белдереп хуплау; тәбрикләү. *Байрам менән ҡотлау. Тыуған көн менән ҡотлау. // Ҡотлау телеграммаһы.* ■ *[Фатима:] Ҡотлағыҙ беҙҙе, сәсеүҙе бөттөк.* Б. Бикбай.

**3.** Ҡыуаныс белдереп, байрам яһау, мәжлес йыйыу; туйлау. *Бәпес ҡотлау. Өй ҡотлау.* ■ *[Зыя:] Арбаны ҡотлап, йөрөштөрөп алайыҡ.* М. Тажи.

**4.** *иҫк.* Хөрмәтләү, ҙурлау. *[Малай:] Минең һөйгән ҡыҙым унда үлеп ҡалған, үкенесле ҡотҡарыуың мине ҡотлап.* «Бабсаҡ менән Күсәк».

**ҠОТЛАУ** [2] *и.* Теләктәшлек, шатлыҡ белдереп, тәбрикләп бирелгән бүләк. *[Әсәһе:] Эй, балам, ундай ергә барғас, үҙең уларҙан алда ҡысҡырып йырлайҙар ҙа, бармаҡ шартлатып бейеп алалар уны. Улар үҙеңде яратып, уйынсыға аҡса бирәйек әле, тигән булып, янсығыңа ҡотлау һалыр ине* (Әкиәттән).

**ҠОТЛАШЫУ** *к. урт. кар.* **ҡотлау** [1] 1—3.

**ҠОТЛО** *с.* **1.** Бәхет, ырыҫ, муллыҡ килтергән; изге. *Ҡотло ер.* / Бәхетле, ырыҫлы. *Ҡотло кеше.*

**2.** Малдың үрсемен, именлеген һаҡлаған; изге. *Ҡотло мал.* ■ *Боронғо башҡорттар мал-тыуарҙың именлеген, үрсемен үҙендә тотҡан ҡотло мал булыуына ышанған. Ҡотло малды ҡулдан ысҡындырыу мал бәхетенән яҙыу менән бер һаналған* (Әкиәттән).

♦ **Ҡотло аяғың менән** йортҡа ингән киленде, ҡунаҡты ҡаршылау һүҙе. *[Мәғфүрә:] Әйҙә, әйҙә, килен, ҡотло аяғың менән.* Һ. Дәүләтшина. *[Этҡол:] Әйҙүк, түрәләр, ҡотло аяғығыҙ менән!* Ғ. Дәүләтшин. **Ҡотло булһын** берәр яңы нәмәгә изге теләк белдереү, тәбрикләү һүҙе. *Ерем-әсәм, әүәлгесә күңелең ялҡын-утлы булһын. Ҡырҡ бишенсе сыуаҡ яҙың — тыуған көнөң ҡотло булһын!* Ғ. Рамазанов.

● *Байҙа булһа — ҡотло булһын, ярлыла булһа — ҡайҙан алдың.* Әйтем. *Ҡотло ҡунаҡ төнәһә, ҡуйың игеҙ табыр; ҡотһоҙ ҡунаҡ төнәһә, ҡуйыңды бүре алыр.* Әйтем.

**ҠОТОЙ: ҡыҙ ҡотой** ҡыҙҙар араһында йөрөүсән, ҡыҙҙар менән бергә уйнаусан малай; **ҡотой бутҡаһы** кеше ҡуплектән барлыҡҡа килгән тәртипһеҙлек; буталсыҡ.

**ҠОТОҠ** *и. диал.* Ҡоҙоҡ. *Ҡотоҡ ауыҙы. Ҡотоҡ ҡаҙыу.* ■ *Буш биҙрә ҡотоҡтоң йылтыр боҙ көплəгән бураһына доңғор-доңғор һуғылып түбән төшә.* Ш. Янбаев.

● *Әсмәм тигән ҡотоғоңдан өс әйләнеп һыу эсерһең.* Әйтем.

**ҠОТОҠА** *с. диал.* **1.** Ҡупым.

**2.** Ҡурҡаҡ.

**ҠОТОҠАЛАНЫУ** *к. диал.* Ҡурҡаҡланыу. *Әбделхаҡ ағай, имен саҡта кире боролайыҡ. Валлаһи, аҙаштыра был малай [Нурулла] беҙҙе! — тип, Садыйҡ, ҡотоҡаланып, күңелгә шик һалды.* Ш. Янбаев.

**ҠОТОҠҺОН** *и. иҫк.* Мөгөҙҙән эшләнгән дары һауыты.— *Ҡотоҡһонға дары тултырып алайым әле.* М. Тажи.

**ҠОТОЛҒОҺОҘ** *с.* Ҡотолоп ҡалыу мөмкин булмаған. *Ҡотолғоһоҙ хәл.* ■ *Үлемдән мин ҡурҡмайым. Минең өсөн ул ҡотолғоһоҙ икән, бер нәмә лә ҡылып булмай.* Д. Исламов.

**ҠОТОЛҒОҺОҘЛОҠ** *и.* Ҡотолғоһоҙ хәл. *Революцияның ҡотолғоһоҙлоғо.* ■ *Беҙ һуғыштың ҡотолғоһоҙлоғона ышана инек.* М. Кәрим.

**ҠОТОЛДОРОУ** *к.* Ауыр хәлдән арындырыу, йырындырыу; ҡотҡарыу. *Бәләнән ҡотолдороу. Судтан ҡотолдороу.*

**ҠОТОЛОУ** *к.* **1.** Азатлыҡ алыу, ирекҡә сығыу; азат булыу. *Ситлектән ҡотолоу. Тотҡондан ҡотолоу. Ҡоллоҡтан ҡотолоу. Ҡасып ҡотолоу. Ҡотолоп ҡайтыу.*

**2.** Ауыр хәлдән арыныу. *Бөлгөнлөктән ҡотолоу. Бәләнән ҡотолоу. Иҫән-һау ҡотолоу.* ■ *Кешеләр [һуғышта] һәр аҙымында үлемде күҙ алдында күрә бара, унан ҡотолоп ҡалыу әмәлен эҙләй, эйелә, ергә һыйына, шыуыша.* Д. Юлтый. *Ҡайғы-хәсрәттәрҙән бер ҡотолоп, рәхәт тороr көндәр бар микән?* (Халыҡ йырынан). *Ҡотолдо бер себендәй йәнең һинең, беҙҙәрҙән булмаҫ һиңә ғазап, тине.* «Бабсаҡ менән Күсәк». / Ниҙәндер арыныу; бушаныу. *Бурыстан ҡотолоу.* ■ *Илама ла, атай, илама, мин ямандан инде ҡотолдоң* (Сеңләүҙән).

**3.** *һөйл.* Баланан бушаныу, бала табыу. *[Ҡушай:] Бисәләр иҫән-һау ҡотолоп, беребеҙҙең ир, беребеҙҙең ҡыҙ бала булһа, ҡоҙа булышайыҡ* (Хикәйәттән). *Мәғфүрә менән икәүләп уны йыуындырып, әсәһенең ҡулдәк аламаһына биләп һалдылар ҙа Гөлйөҙөмдөң һау ҡотолғанына ҡыуаныштылар.* Һ. Дәүләтшина.

♦ **Шулай тип ҡотол** ҡаршылыҡҡа, бәхәскә килгән кешенең ыңғай һүҙенә ҡарата әйтелә. *[Айбулат:] Юк, ағай, юк. Уйламайым да, өйрәнмәйем дә. [Ҡотлояр:] Шулай тип ҡотол.* Һ. Дәүләтшина.

● *Ат аяғын ҡыҙғанған ылауҙан ҡотолмаҫ.* Әйтем. *Атың яман булһа, һатып ҡотол; юлдашың яман булһа, ҡасып ҡотол.* Әйтем. *Бүренән бүрек ташлап ҡотолоп булмай.* Мәҡәл. *Күсеп киткән иҫке йортонан ҡотолған.* Мәҡәл. *Ҡатыҡ эскән ҡотолған, ҡалаҡ ялаған тотолған.* Мәҡәл.

**ҠОТОЛТОУ** *к. кар.* **ҡотолдороу.** *Үлемдән ҡотолтоу.*

**ҠОТОНҺОҘ** *с. диал.* Ҡотһоҙ.

**ҠОТОП** [*гәр.*] *и. кит.* Полюс. *Көньяҡ ҡотоп. Төньяҡ ҡотоп. Ҡотоп еле.* ■ *Ҡотоп тигән серле нөктә бар, ти, бик алыҫта, боҙло төньяҡта.* Ҡ. Даян. *Күбәләк ҡар яуа ине, йып-йылы ине кисә. Ә бөгөн ҡотоп һыуығы һәм төньяҡ еле иҫә.* Ғ. Байбурин. **Ҡотбе йәнүби** *иҫк.* Көньяҡ ҡотоп. **Ҡотбе шимали** *иҫк.* Төньяҡ ҡотоп.

**ҠОТОР-ҠОТОР** *оҡш.* Эсәк буйлап һауа йөрөгәндә сыҡҡан тауышты белдергән һүҙ. *Ҡотор-ҡотор итеү.*

**ҠОТОРЛАУ** *к.* Ҡотор-ҡотор иткән тауыш сығарыу. *Эс ҡоторлай.*

**ҠОТОРОҠ** [1] *и.* **1.** Аҡылды зәғифләп, ҡоторта

торған йоғошло ауырыу. *Ҡоторок йоғоу. Ҡотороҡ менән ауырыу.*

**2.** Аҡылһыҙлыҡтан, шашҡанлыҡтан килгән ҡылыҡ. *Улар бит түйып котора. Уларҙың ҡоторогона эйәрһәң, бәләгә ҡалырһың.*

**3.** *диал.* Ҡотҡо. *Ҡотороҡҡа бирелеү.* ■ *[Сөнәгәт тураһында Ғилаж:] Ул минән бәләкәйҙән сығып китте. Ташбатҡан ауылындағы бабаларының ҡоторого менән ҡайтып китте лә, шунан аҙаҡ миндә торманы.* Ж. Кейекбаев.

**ҠОТОРОҠ** [2] *с.* Ярһыулы, шашҡын; ҡоторонҡо. *Ҡотороҡ кеше.* ■ *Минең күңел иләҫ-миләҫ булып китте. Күңелгә әллә ниндәй ҡотороҡ дәрттәр йүгерҙе.* Т. Йәнәби.

**ҠОТОРОНҠО** *с.* Ярһыулы, шашҡын; ҡотороҡ. *Уның [Емештең] бөтә йәнен-тәнен быгаса булмаған ҡоторонҡо ҡыуаныс биләп алды.* З. Биишева.

**ҠОТОРОНОУ** *к.* **1.** Саманан тыш ярһыу; шашыу. *Ҡоторонop ҡул сабыу.* ■ *Һыҙғыра юха йыландар ҡоторонoп, ас айыуҙар аҡыра сахра тултырып.* Ш. Бабич. *Ашап, эсеп ҡоторонған халыҡҡа етә ҡалды. Һыпырылып тышҡа сыҡтылар. Оран һалып сауыллыҡ араһына ябырылдылар.* Т. Хәйбуллин.

**2.** *күсм.* Сиктән тыш көсәйеп ярһыу. *Ҡоторонoп ағыу.* ■ *Тышта ҡоторонoп ел-дауыл ҡупҡан, күк күкрәгән, ҡойоп ямғыр яуа башлаған* (Әкиәттән).

**ҠОТОРОУ** *к.* **1.** Баш мейеһенә үткән үҙенә бер төрлө вирустан аҡыл зәғифләнеп, шашыу; ҡотороҡ ауырыуы менән ауырыу. *Ҡоторған бүре. Ҡоторған эт.* ■ *Тәүҙә эт менән бүре ҡотора. Улар кеше һәм хайуандарҙы тешләп, уларға йоҡтора.* В. Ғүмәров. *Ҡоторған эт күккә ҡарап өргән менән һауала торған айҙың нуры китмәҫ.* Аҡмулла.

**2.** *күсм.* Саманан тыш ҡыланыу; шашыу. *Түйып ҡоторoу. Ҡыҙ-ҡырҡындар ҡоторoп, үйнап-көлгән Урал тау* (Ҡобайырҙан). / Саманан тыш ярһыу; шашыу. *Мәжлес ҡотора. Туҫтаҡҡа һалынған балдар сәкетеп-сәкетеп йотола.* Т. Хәйбуллин.

**3.** *күсм.* Сиктән тыш көсәйеп ярһыу. *Ел ҡоторoу.* ■ *Буран ҡотора. Күҙ асырлыҡ әмәл юҡ.* Р. Солтангәрәев.

**4.** Хәл ҡылымдың *-п* формаһында ҡушма ҡылымдың беренсе компоненты булып, төп мәғәнәне көсәйтә. *Ҡоторoп үҫеү.* ■ *Баҫыуҙарҙа ашлыҡ ҡоторoп уңған. Быйыл тулы булыр буралар.. Ҡайҙа барма, кешеләрем минең шатлыҡ сәсеп, бәхет уралар.* М. Кәрим.

● *Ауыҙы ашҡа тейһә, алйот ҡоторор.* Әйтем. *Буранда бүре ҡоторор, урамда тиле ҡоторор.* Әйтем. *Ҡоторған бүре утҡа инер.* Әйтем. *Ҡомһоҙ ҡоторһа — ҡоҙоҡҡа ҡармаҡ һалыр.* Әйтем. *Эт ямандары буранда ҡоторор.* Мәҡәл.

**ҠОТОРОШОУ** *к. урт. ҡар.* **ҡоторoу** 2.

**ҠОТОРСОҠ** *и.* **1.** Ағастан соҡоп яһалған бәләкәй йомро һауыт. *Бер ҡоторсоҡ тоҙ.* ■ *Ҡоторсоҡто асып ебәреүе булды, бөтә өйгә тәмле бал еҫе бөркөлдө.* Й. Солтанов.

**2.** Мылтыҡ яһағанда дары үлсәп һала торған бәләкәй генә һауыт. *Бер ҡоторсоҡ дары.*

**3.** *диал.* Сәй һауыты.

**ҠОТОРТОУ** *к.* **1.** Берәй нәмәгә өндәп, ҡорсотоу; ҡуҙғытыу; ҡотҡо һалыу. *Ҡотортоп алып китеү. Ҡотортоп ебәреү.* ■ *Торна Ғүмәрҙең улы Ғосман ун ете кешене ҡотортоп, колхозға ғариза бирҙергән.* Д. Юлтый. *[Сынбулатов — гармунсыға:] Һин, ҡустым, икенсе ауылдан килеп, минең колхоздың йәштәрен ҡотортоп йөрөмә.* М. Тажи.

**2.** Маҡтап, буйлатып, шаштырыу. *Баланы ҡотортоу.*

**ҠОТОРТОШОУ** *к. урт. ҡар.* **ҡотортоу.**

**ҠОТОС** *с. диал.* Ҡурҡаҡ. *Ҡотос кеше.*

**ҠОТОСЛАНЫУ** *к. диал.* Ҡурҡаҡланыу. *Ҡотосланып йөрөү.*

**ҠОТҺОҘ** *с.* **1.** Бәхет, ырыҫ, уңыш килтермәгән, ҡото булмаған. *Ҡотһоҙ булыу.* ■ *Ҡотһоҙ булған шоңҡарҙан торомтай тигән ҡош артыҡ* (Ҡобайырҙан).

**2.** Күңелгә ятмай торған; йәмһеҙ. *Көҙгө ҡала ҡотһоҙ ине. Күк йөҙөн ҡурғаш һымаҡ ауыр болоттар ҡаплаған. Ел, ямғыр. .. Күшеккән кешеләр үткеләй.* Д. Исламов. / Күңел өшөткөс яман, ҡурҡыныс. *Төпкә батҡан ҡотһоҙ, ялтыр күҙҙәренән уҡ был кешенән әллә ни мәрхәмәт көтөргә кәрәкмәгәнлегe күренеп тора.* Д. Исламов. *Иҙән аҫтынан ҡотһоҙ бер ғифрит килеп сыға ла былар-ҙы тотоп ала* (Әкиәттән).

**3.** Бик көслө, зәһәр. *Ҡотһоҙ һыуыҡ төн. Ҡотһоҙ итеп ҡысҡырыу.* ■ *Хәйер, гәжәп түгел, кем йөрөһөн шундай ҡотһоҙ буранда.* Ғ. Байбурин. *.. Туң ишек ҡотһоҙ итеп шығырланы, һәм унан Әскәпъямал апай менән Кинйәбулат килеп инде.* Р. Солтангәрәев.

**ҠОТҺОҘЛАНЫУ** *к.* **1.** Ҡотһоҙға (1 мәғ.) әйләнеү; ҡото китеү. *Ҡотло тормош ҡотһоҙланды, ҡото киткәс ҡулымдың* (Халыҡ йырынан).

**2.** Йәмһеҙгә әйләнеү, йәме, матурлығы китеү. *Эңер ҡараңғыһы баҫа башлаған өй эсе ҡотһоҙланып киткән һымаҡ булды.* З. Биишева.

**ҠОҺАЙ** *и.* Өҫ аршинға тиң булған оҙонлоҡ үлсәү берәмегe; сажин. *Утыҙ ҡоһай самаһы урында «Яңғыҙ өйәңке» тигән бер өйәңке бар.* Ғ. Дәүләтшин.

**ҠОҺОҠ** *и. диал.* Керәкә.

**ҠОҺОР** [*гәр.*] *и.* **1.** Ниҙеңдер кире һөҙөмтәһе, насар шауҡымы. *Ҡоһорон күреү.* ■ *[Гөлзифа:] Эй, Асия, йәтимлек һиҙелмәһә лә, ҡоһоро ҡала инде.* Б. Бикбай. *Аслыҡ ҡоһоро урманлы тау-таш араһындағы ауылдарҙа йәшәүсе халыҡты бигерәк тә ныҡ бөлдөрҙө.* Я. Хамматов.

**2.** Насар эш-ҡылыҡтың кире ҡайтҡан яҙаһы; кейә. *Ҡоһоро тейеү. Ҡоһоро һуғыу.* ■ *Салих төшкә тиклем йоҡлап, аҙна буйы ҡалған йоҡоһоноң ҡоһорон ҡайтарҙы.* Х. Мохтар. / Яманлыҡҡа ҡаршы булған яуап; ҡон, үс. *Ҡоһорон алыу. Ҡоһорон ҡайтарыу.*

● *Төкөрмә ашыңа: ҡоһоро төшөр башыңа.* Мәҡәл.

**ҠОШ** *и.* **1.** Умыртҡалылар төркөмөнә ҡараған ҡанатлы, ике аяҡлы, суҡышлы, ҡауырһын йөнлө йән эйәһе. *Инә ҡош. Һайрар ҡош. Йыртҡыс ҡош. Кейек ҡош. Күсәр ҡоштар. Йорт ҡошо. Диңгеҙ ҡошо. Һунар ҡоштары. Һыу ҡошо. Ҡош ите. Ҡош йомортҡаһы. Ҡош ҡауырһыны. Ҡош ояһы. Ҡош тубы. Ҡош фермаһы. Ҡош һайрауы.* ■ *Бейектә оса ҡоҙғон ҡош, унан бейек осор*

*ыласын бар. Ыласындан да бейек оса торған ҡош батшаһы ҡыйғыр бөркөт бар.* Салауат Юлаев. *Ябалаҡ ҡош маҡтанһа, ярҙан сыҡҡан алдым, тир* (Ҡобайырҙан). **Ҡош сөйөү** өйрәтелгән йыртҡыс ҡош менән һунар итеү. *Күсәр хан менән Күсмәҫ хан икеһе бик дуҫ булып, ҡунаҡҡа саҡырышыр, ҡош сөйөп, төлкө алдырып, бергә һунарға йөрөшөр булған, ти.* «Ҡуҙыйкүрпәс менән Маянһылыу». / *күсм.* Ҡанатлы матур тойғоно белдергән шартлы билдә. *Бәхет ҡошо. Шатлыҡ ҡошо.* ■ *Аҫылбикәнең .. үсмер күңеленә тәүге тапҡыр мөхәббәт ҡошо ҡағылды.* К. Мәргән.

**2.** *күсм.* Боронғо башҡорт ырыуҙарын белдергән билдәләрҙең береһе. *Асылыкүл тирәһендәге ҡыпсаҡ ырыуы башҡорттарының ҡошо — ҡарағош, ағасы — ҡарағас, ораны — салауат, тамғаһы — тәҙрә булған.* М. Сәғитов.

♦ **Ауыҙ менән ҡош тотоу** уңған, булдыҡлы кешегә ҡарата ҡулланыла. **Дөйә ҡошо** *кар.* **дөйәғош** 1. **Иректе ҡош** ни эшләһә лә иректе, азат кешегә ҡарата әйтелә. *Беҙ хәҙер иректе ҡоштар. Үҙебеҙҙең полкты әҙләү һылтауы менән ун көн инде Белоруссия яландарын гиҙәбеҙ.* Д. Юлтый. **Йәннәт (*йәки* ожмах) ҡошо** дини ҡарашса, үлеп, ожмахҡа ингән кешенең йәне. **Ҡара ташҡа ҡош ҡундырмаҫ кеше** үткер, батыр кешегә ҡарата әйтелә. **Ҡош кеүек осоу** бик тиҙ хәрәкәт итеү. *Күрән ат ҡош кеүек оса.* Д. Юлтый. **Ҡоштар осоп етмәҫ ер** бик алыҫ ара. *Ҡоштар осоп етмәҫ ергә китә һалдат баштары* (Халыҡ йырынан). **Ҡош теле** йомортҡаға баҫып, йоҡа итеп йәйеп, ҡыйыҡлап ҡырҡып майға бешергән ҡамыр аҙыҡ. *Бер мәжлескә етерлек ҡош теле бешерҙем.* **Ҡош телендәй генә хат** бер-ике ауыҙ һүҙҙән торған бәләкәй генә хат. .. *Ошо яҙыуҙы биреүсе артынан миңә бер ҡош телендәй хат яҙып ебәрһәгеҙ икән ..* И. Абдуллин. **Ҡош тәне ҡалҡыу** өшөгәндә йәки башҡа сәбәптән һибелеп сыҡҡан бөрсөктәр менән ҡапланыу (тәнгә ҡарата). *Емеш өшөп, ҡош тәне ҡалҡҡан беләктәрен һыпырғылап, тағы бер аҙ тупһала тапаныпторҙо.* З. Биишева. **Ҡош юлы** күк йөҙөндә аҡ юлаҡ булып күренгән алыҫ йондоҙҙар төркөмө. *Ҡош юлдары буйлап төндәрҙә ҡаңғылдашып ҡаҙҙар осалар.* Ғ. Амантай. **Нағай ҡошо** *диал. кар.* **сәмреғош** 1.

**ҠОШ-ҠОРТ** *и. йыйн.* **1.** Бөтә булған ҡоштар, һәр төрлө ҡош. *Мең төрлө ҡош-ҡорттоң мең төрлө тел, мең төрлө тауыш менән һайрауына .. ҡорос машиналар тауышы ҡушылып китте.* Ғ. Дәүләтшин. / Йорт ҡоштары. *Ҡош-ҡорт аҫрау. Ҡош-ҡорт үрсетеү.* ■ *Ҡош-ҡорт үрсетеп ебәреү өсөн бик аҙ ғына экономия ла етә торғайны.* С. Агиш.

**2.** Төрлө ҡырағай йыртҡыс йәнлек. *Ҡарағөлөмбәт был балаларҙы әҙләп тә таба алмаған, ҡош-ҡортҡа тап булып, һәләк булғандарҙыр, тип уйҙы.* «Бабсаҡ менән Күсәк».

**ҠОШМАҠ** *и. диал.* Кәшмәк.

**ҠОШСО** [1] *и.* Ҡош ҡараусы, ҡош тәрбиәләүсе. *Ҡошсо хеҙмәте.*

**ҠОШСО** [2] *и.* Бер башҡорт ырыуының исеме.

**ҠОШСОҠ** *и. кес. кар.* **ҡош.** *Йылы яҡтан ҡайтҡан ҡошсоҡ, эй, һайрай талға ҡунып.* «Башҡортостан ҡыҙы», 1971, № 1.

**ҠОШСОЛОҠ** *и.* Ауыл хужалығының ҡош үрсетеү менән шөғөлләнгән тармағы. *Ҡошсолоҡ фермаһы.* ■ *Махсуслаштырылған ҡошсолоҡ совхоздары ойошторолоу арҡаһында йомортҡа етештереү ҙә арта башланы.* «Совет Башҡортостаны», 1965, 29 май.

**ҠОШТАБАҠ** *и.* **1.** Аш-һыу өсөн ҡулланылған киң йәйенке ситле, уртаса ҙурлыҡтағы табаҡ. *Ҡоштабаҡҡа аш һоҫоу.* ■ *Гөлйөҙөм ҡоштабаҡҡа ыумас ыуып әҙерләне.* Һ. Дәүләтшина.

**2.** *диал.* Аш һоҫа торған ҙур табаҡ.

**3.** *диал.* Тәрилкә. *Ҡом ҡоштабаҡ. Тимер ҡоштабаҡ. Ваҡ ҡоштабаҡ. Ҙур ҡоштабаҡ.*

**ҠОЯҠ** *и. тар.* Буҫтауға ҡабырсаҡлап, ҡатландырып тимер баҫҡан хәрби кейем. *Батырға .. уҡлы яуҙа һарайтаһы, ҡояғы ныҡ булыу ҙа шарт.* Ғ. Хөсәйенов.

**ҠОЯҢҠЫ** *с. һөйл.* Төҫө, килбәте меҫкен; ҡойто. *Ҡояңҡы кеше.* ■ *Балалар йортона барып ингәс, иң тәүҙә уның [Шәһәрзаданың] күҙенә ҡояңҡы ғына бер малай ташланды. .. Уның таҙалығы юҡ ине.* В. Әхмәҙиев. / Әрләгәндә ҡулланыла.

**ҠОЯСЫЛ** *с. диал.* Ғәйбәтсе. *Ҡоясыл ҡатын.*

**ҠОЯШ** *и.* **1.** Ҡайнар газдан торған гигант шар формаһындағы, үҙендәге термоядро реакция иҫәбенә яҡтылыҡ һәм йылылыҡ сығанағы булған, Галактика системаһында төп күк есеме. *Ҡояш байыу. Ҡояш сығыу. Ҡояш күтәрелеү. Ҡояш нуры. Ҡояш яҡтыһы.* ■ *Бына бер саҡ тау биттәрен солғап яҡтыға, Ҡояш сыға башлай, нурҙарына йым-йым итә Урал таштары.* Ғ. Сәләм. *Ҡояш ҡыҙарып байыһа, елле ямғыр булыр.* Һынамыш. **Ҡояш ашау** 1) ҡояш нурына тән ҡарайыу, яныу. *Ап-аҡ итеп кершән яҡһаң, битең ҡояш ашамаҫ* (Халыҡ йырынан); 2) ҡояш нурына ағарыу, уңыу. *Яулыҡты ҡояш ашаған;* 3) иретеп бөтөрөү (ҡарға ҡарата). *Тау биттәрендәге ҡарҙы ҡояш ашап бөтә, йомрандар ояларынан сыға башлай.* Һ. Дәүләтшина. **Ҡояш бите** ҡояш төшкән урын. *Ана, бала-сағалар ҡояш битенә — сыуаҡҡа сығып, әүеҫлек түбәһенә менеп, ҡурсаҡ уйнайҙар.* Т. Йәнәби. **Ҡояш торошо** Ҡояш үҙәге эклиптиканың иң төньяҡ йәки иң көньяҡ нөктәһенән үткән мәл. *Йәйге ҡояш торошо* (иң оҙон көн 21—22 июнь). *Ҡышҡы Ҡояш торошо* (иң ҡыҫҡа көн 21—22 декабрь). **Ҡояш кәртәләнеү** Ҡояш тирәһендә нурлы ҡуласа барлыҡҡа килеү. *Ҡояш кәртәләнһә, буран була.* Һынамыш. **Ҡояш ҡолаҡланыу** Ҡояштың ике яғынан оҙон ҡолаҡ барлыҡҡа килеү. *Ҡояш ҡолаҡланһа, һыуыҡ була.* Һынамыш. **Ҡояш тотолоу** Айҙың Ер менән Ҡояш араһына тура килеп, Ҡояшты ҡаплауы. *Көндөҙгө ун икеләр тирәһендә ҡапыл ҡараңғы төшә башланы. Ҡояш тотолоу хаҡында алдан уҡ әйтеп ҡуйылған булһа ла, нисектер ҡаушап ҡалынды.* Ә. Бикчәнтәев. **Ҡояш менән** бик иртә йәки бик һуң, ҡояш сыҡҡан йәки батҡан ваҡытта. *Ҡояш менән тороу.* ■ *Ҡояш менән ятҡан малайҙар әтәс менән бергә торалар.* Ғ. Амантай.

**2.** Шул есемдән килә торған яҡтылыҡ, нур, эҫелек. *Ҡояшта йылыныу.* ■ *Булмә гәжәп яҡты. Стенаға урам яҡ тәҙрәнән ҡояш төшә.* Д. Юлтый. *Ҡояшта ҡыҙыныу өсөн иң уңайлы ваҡыт — иртәнге һәм төштән һуңғы сәғәттәр.* «Совет Башҡортостаны», 1970, 6 июнь. **Ҡояш ваннаһы** тәнде

ҡояш нурҙары тәьҫире менән даулау, сыныҡтырыу процедураһы.

3. *күсм.* Кеше тормошон күркәм иткән бәхет, шатлыҡ сығанағы. *Бәхет ҡояшы. Дан ҡояшы.* ■ *Ҡояш! Әү һин, балалыҡ ҡояшым, ғүмер буйы яҡтырт юлымды.* Р. Ғарипов. *Ҡырым ҡояшы ғына йылы түгел, нур бирмәһә Кремль ҡояшы.* Ғ. Сәләм.

♦ **Ай күрҙе, ҡояш алды** ҡапыл күҙ алдынан ниҙер йәки нимәлер юҡ булғанда әйтелә. **Ай ҙа ҡояш булыу** һәр саҡ көләп, йылмайып ҡына тороу. **Ана ҡояш** хөрәфәт буйынса, ышандырырға тырышып, ант иткәндә әйтелә. *Валлаһи, Сәғиҙә! Ышанмаһаң, ана ҡояш.* М. Тажи.

● *Алыҫтағы ҡояш йылы була.* Әйтем. *Дөрөҫлөк ҡояштан яҡтыраҡ.* Әйтем. *Ҡайҙа барһаң да бер ҡояш.* Әйтем. *Ҡояш нуры — шәфҡәт ҡулы.* Әйтем. *Ҡояштың һиңә буйы етһә лә, һинең уға буйың етмәҫ.* Әйтем. *Ҡояш янында — йылылыҡ, әсә янында — изгелек.* Әйтем. *Себерҙә лә шул ҡояш, Семберҙә лә шул ҡояш.* Әйтем. *Сыҡмаған ҡояшҡа ҡыҙынма.* Әйтем.

**ҠОЯШЛАУ** *ҡ.* Ҡояшта ҡыҙыныу; сыуаҡлау. *Аждаһа күлдән сығып, ҡояшлап ятҡан, ти* (Әкиәттән).

**ҠОЯШЛЫ** *с.* **1.** Ҡояш яҡтыртып торған; аяҙ. *Ҡояшлы көн.* ■ *Үткән яҙҙың матур шаян ҡояшлы төш ваҡыты Айбулаттың күңелендә әле лә бөтә йылылығы һаҡлана.* Һ. Дәүләтшина.

2. *күсм.* Шатлыҡлы, бәхетле. *Ҡояшлы тормош.* ■ *Шулай уҡ ҡулаҡтар ҙа, беҙҙең бәхетле, ҡояшлы колхоз тормошон юҡ итер өсөн, теш-тырнаҡтары менән йәбешеп яталар.* Б. Бикбай.

**ҠӨДДӨС** [*ғәр.*] *с. иҫк. кит.* **1.** Бик изге, бик ҡәҙерле.

2. (*баш хәреф менән*) Ир-ат исеме.

**ҠӨДДӘ** *и. диал.* Сик. *[Сәлим:] Беҙҙең юл башы алыҫтан, ҡөддәһе ошо һеҙҙең ауыл.* Н. Мусин. **Ҡөддәһенә сығыу** сигенә сығыу.— *Килен булған кеше, әйтерһең, ҡайны-ҡәйнә донъяһының ҡөддәһенә сыҡмаға килә.* Ж. Кейекбаев.

**ҠӨДСИ** [*ғәр.*] *с. иҫк. кит.* Изге, ҡәҙерле. *Көҙгө көнгә, көмөш шишмәләргә ҡөдси аҡ нурҙарын тамдыра.* Д. Юлтый.

**ҠӨДСИӘТ** [*ғәр.*] *и. иҫк. кит.* Изгелек, сафлыҡ. *Ҡайҙа ул эштән генә ҡөдсиәт эҙләгән кеше?* М. Ғафури.

**ҠӨҘРӘТ** [*ғәр.*] *и.* **1.** Көс, ҡеүәт. *Ҡөҙрәт эйәһе. Ҡөҙрәт биреү.* ■ *Беҙҙең иптәштәр ниндәй ҡөҙрәт менәндер һау ҡайта.* Д. Юлтый.

2. *күсм.* Башҡарыр һәләтлек, тылсымлы көс. *Бына музыкант уны [ҡумыҙҙы] ауыҙына килтереп терәй һәм ирендәре менән ҡымтып ала ла.. телгә сиртә башлай. Шул мәлдә уҡ оҫтаның ҡөҙрәте менән сағыу моң тарала.* «Башҡортостан ҡыҙы», 1986, № 1. *Аҫыл һүҙҙәрҙең нур һибер ҡөҙрәте бар.* Ғ. Хөсәйенов. *О, ышаныс! Хатта мәйеттәргә ҡөҙрәт бирә торған көсөң бар. Ә бит минең һинең исемең менән алып бөтөлмәгән үсем бар.* Х. Ғиләжев.

3. (*баш хәреф менән*) Ир-ат исеме.

● *Уҡ ҡөҙрәте ян керешендә, ир ғәйрәте — ил кәңәшендә.* Әйтем.

**ҠӨҘРӘТЛЕ** [*ғәр.*] *с.* Башҡарыр көсө ҙур; ҡеүәтле. *Ҡөҙрәтле ғәскәр.* ■ *Айҡаны йыһанды ҡөҙрәтле Ватандың уraҡлы-сүкешле осҡосо.* Ш. Бикҡол. / Көслө, ҡеүәтле. *Ҡөҙрәтле кеше.*

2. *күсм.* Тылсымлы, сихри көскә эйә булған. *Ҡөҙрәтле ҡымыҙҙың тәьҫире ғәжәп көслө ине! Көндән-көн минең кәйеф күтәрелә, шатлыҡ арта бара!* «Ағиҙел», 1969, № 3.

**ҠӨҘРӘТЛЕЛЕК** *и.* Ҡөҙрәтле булыу сифаты. *Алланың ҡөҙрәтлелеге тураһындағы идея феодализм эпохаһында руханиҙар тарафынан ныҡышмалы рәүештә таратылған.* «Ағиҙел», 1969, № 11.

**ҠӨЛҺЫУАЛЛА** *и. дини* Алланың берлеген, уға тиң бүтән бер ни ҙә юҡлығын әйткән сүрә. *Ҡөлһыуалла әйтеү.* ■ *Ярай, балам, мин бит һаташам, шуға йоҡлай алмай маташам. Бәлки серем итеп алыр инем, ҡөлһыуалла уҡып ташлаһам.* Б. Ишемғол.

**ҠӨРЪӘН** [*ғәр.*] *и.* Мөхәммәт пәйғәмбәрҙең һүҙҙәренән яҙылып, ислам диненең нигеҙен билдәләгән китап. *Ҡөрьән сүрәһе. Ҡөрьән уҡыу.* ■ *Һөйләмә ҡөрьән һүҙен, хәҙрәт, етәр тим, көйләмә! Мөнбәр өҫтөндә тороп тәңреңде маҡтап һөйләмә!* Б. Мирзанов. **Ҡөрьән сығыу** мәрхүм иҫтәлегенә арнап йәки ниндәйҙер ваҡиға уңайы менән ҡөрьәнде баштан-аяҡ уҡып сығыу.

**ҠУБА** *с. диал.* Ҡәкес. *Ҡуба танау.* / *и. мәғ.* Ҡәксәйеп торған танаулы кеше.

**ҠУБАҒА** *и. иҫк.* **1.** Ағас, таш кеүек нәмәгә ерлегенән ҡалҡыу итеп юнылған һүрәт йәки яҙыу.

2. Аша һалып тоғторолған тимер; атлама тимер. *Һабандың шырты ҡубаға менән нығытыла ине.*

3. *диал.* Һыулыҡ.

♦ **Ҡубаға һебә** йылҡының бөйөрөнә дуғалана биреп тоташҡан ҡыҫҡа ҡабырғаһы.

**ҠУБАҒАЛАУ** *ҡ. иҫк.* **1.** Ҡубаға (1 мәғ.) төшөрөү. *Ҡубағалап яҙыу.*

2. Аша тимер менән тоттороу.

3. *диал.* Һыулыҡлау. *Ҡыйыҡтың ситенән ағып төшә торған һыуҙы төрлө урындан ебәрмәҫ өсөн ҡубағалап ҡуйғандар. Яуған ямғырҙың һыуы улаҡ буйлап мөйөш-мөйөштән түбән аға.* Ғ. Дәүләтшин.

**ҠУБАРҺЫТЫУ** *ҡ.* Ҡуптарып алыу. *Тирене ҡубарһытыу.*

**ҠУБАРҺЫУ** *ҡ.* Ҡубып һыҙырылыу. *Таҡтаның өҫкө ҡаты ҡубарһып тора.*

**ҠУБАРЫЛЫУ** *ҡ. диал.* Ҡубыу. *Тиреһе ҡубарылып сыҡты.*

**ҠУБАРЫУ** *ҡ. диал.* Ҡуптарыу, ҡуптырыу.

**ҠУББӘ** [*ғәр.*] *и. иҫк. кит.* Көмбәҙ. *Таш бинаның түбә дүрт мөйөшлө булып, бер аҙ менгәс, һигеҙ мөйөшлөгә әйләнә. Түшәме ҡуббә рәүешендә.* Ғ. Фәхретдинов.

**ҠУБЫҘ** *и. кар.* **ҡумыҙ.**

**ҠУБЫНЫУ** *ҡ. диал.* Күтәрелеү. *Бына бер көн көслө дауыл ҡубынды, өйәңкебеҙ биле һынып йығылды.* Й. Солтанов.

**ҠУБЫР** *и. диал.* Туҫтаҡ. *[Бай улы:] Эй һылыу ҡыҙ, һылыу ҡыҙ, бөгөсә мин төш күрҙем: ике мочат ҡул күрҙем, ике аҡ ҡубыр күрҙем.* «Аҡһаҡ ҡола».

**ҠУБЫРҒЫУ** *ҡ. диал.* Ҡупҡалйыу. *Халыҡ ҡубырғый.*

**ҠУБЫРҒЫШЫУ** *к. урт. кар.* **ҡубырғыу.** *Ҡубырғышып сыға башлау.*

**ҠУБЫРСЫУ** *к.* Тош-тош булып ҡубыу. *Ҡубырсып тороу.* ■ *Кояшка нык янған тән ҡубырсып һыҙырыла.*

**ҠУБЫУ** (ҡуп*г*) *к.* **1.** Йәбешкән йәки урынлашҡан, тоташҡан ерҙән ысҡынып, айырылыу. *Итектең үксәһе ҡуба.* ■ *Стеналар һыуланған, балсыҡ менән һыланған урындары ҡубып төшкән.* Я. Хамматов. *Ерәнсәкәй атым еләалмай — тояҡтары ҡупкан, әллә ни* (Халыҡ йырынан).

**2.** Ҡуҙғалып ҡалҡыу, урындан ҡуҙғалыу; тороу. *Австрийҙар күп булһа ла, беҙ урындан ҡупманыҡ* (Бәйеттән).

**3.** *күсм.* Дәррәү күтәрелеп, хәрәкәткә килеү; ҡуҙғалыу. *Халыҡ ҡуба.* ■ *Класс дәррәү урынынан ҡупты, һәр кем Мәрйәмгә үҙенең рәхмәт тойғоһон үҙенсә еткерергә ашыҡты.* Ғ. Байбурин. / Ҡапыл башланыу. *Атыш ҡупты. Ғауға ҡупты. Дау ҡупты. Дауыл ҡупты. Ҡойон ҡупты. Буран ҡупты. Талаш ҡупты. Тауыш ҡупты. Һуғыш ҡупты. Шау-шыу ҡупты.* ■ *Китәм, дуҫтым, һуғышка, сиктә дауҙар ҡупкан, ти.* Б. Бикбай. *Төйләгән Тауыкты осорға өйрәтә генә башлағайны, арағаӘтәс килеп ҡыҫылып, янъял ҡубып китте* (Әкиәттән).

♦ **Ҙурҙан ҡубыу** ҙур, мул итеп башҡарыу. *Кеше һаман кешесә ҡыланып маташа. Әүәлгесә ҙурҙан ҡуба алмаһа ла, ҡунаҡ саҡырған була.* Ф. Иҫәнғолов. **Зыҡ ҡубыу** *кар.* **зыҡ. Йөрәк ҡубыу** бик нык ҡурҡыу. *Ҡыҙылдар менән аҡтар һуғышы ваҡытында йөрәге ҡубып бөткән Нәбирә курка-курка ғына ишек эргәһенә барҙы.* Н. Мусин.

**ҠУҒА** *и.* Ваҡ-ваҡ башаҡтан торған тарбағай башлы күрәндәр ғаиләһенә ҡараған ҡамыш төрө. *Ҡуғалы күл.* ■ *Шылтыр-шылтыр аҡкан шишмәкәйҙәр буйлап үҫкән ҡуға, күрәндәр.* Ғ. Амантай. *Буйкайҙарың һинең бигерәк зифа, Ағиҙелдә үҫкән ҡуғалай* (Халыҡ йырынан).

**ҠУҘ** *и.* Баҙлап янып торған утлы күмер; тере күмер. *Ҡуҙ төшөрөү. Ҡуҙға әйләнеү.* ■ *[Маһипәрүәс:] Усаҡта ҡуҙы ла шауҙырлап төшкән, бәхеткә. Ҡуҙ һалып, самауырымды гөжләтеп ебәрҙем.* К. Кинйәбулатова. **Ҡуҙ тандыры** ялҡынһыҙ ғына баҙлап яткан ҡуҙ эҫеһе. *[Әбей] сәйгүнгә сәй һалып, усаҡтағы ҡуҙ тандырына бешерергә ҡуйҙы.* Я. Хамматов.

♦ **Ҡуҙға баҫҡан бесәй кеүек** *шул уҡ* **утҡа баҫҡан бесәй кеүек** (*кар.* **бесәй).**

● *Ҡуҙҙы ҡуҙғыма — ҡулың бешер, уты өҫтөңә төшөр.* Мәҡәл.

**ҠУҘАҒАЙ** [1] *с.* Бөхтә, еңел кейенергә яратҡан; ҡупшы, фырт. *Ҡуҙағай кеше. Ҡуҙағай булыу.* ■ *Ҡуҙағай кала егеттәрен ҡурҡытам тип, буран үкерһен.* Р. Ниғмәти.

**ҠУҘАҒАЙ** [2] *с.* Киң, йомарт күңелле. *Ҡуҙағай катын. Ҡуҙағай булыу.*

● *Ҡулында бар — ҡуҙағай, ҡулында юҡ — комағай.* Мәҡәл.

**ҠУҘАҠ** [1] *и.* Ҡайһы бер үҫемлектәрҙең орлоҡтарын эсенә йомоп торған оҙонса көп. *Борсаҡ ҡуҙағы.* ■ *Селек ағастары ҡуҙаҡ ебәреп ултыра.* С. Агиш.

♦ **Бүҙәнә ҡуҙағы** әүернә сәскәлеләр ғаиләһенә ҡараған өйкөм һары сәскәле, ваҡ ҡына көрән орлоҡло үлән; урыҫ ҡаҡыһы. **Ҡарға ҡуҙағы** ваҡ ҡына оҙонсараҡ япраҡлы, күбәләк сәскәле, ҡуҙаҡлы үлән. **Ҡуҙаҡ тал** *диал.* бохар селеге (*кар.* **селек**).

**ҠУҘАҠ** [2] *и. диал.* Уҙаҡ. *Егет һаман алға китә. Был хәл Аҡһаҡ коланың төшөнә инә. Аҡһаҡ кола төшөн ҡуҙаҡтарына һөйләй* (Әкиәттән).

**ҠУҘАҠЛАНЫУ** *к.* Ҡуҙаҡҡа ултырыу, ҡуҙаҡ ебәреү. *Борсаҡ ҡуҙаҡланған.*

**ҠУҘАҠЛЫ** *с.* **1.** Орлоғо ҡуҙаҡ эсендә була торған. *Ҡуҙаҡлы культура. Ҡуҙаҡлы үҫемлек.*

**2. ҡуҙаҡлылар** *бот.* Орлоғо ҡуҙаҡ эсендә була торған үҫемлектәр ғаиләһе.

**ҠУҘАЛАУ** *к. диал.* Ҡурғаштан биҙәк төшөрөү. *Сумканы ҡуҙалау.*

**ҠУҘАЛЫ** *с.* Ҡурғаштан биҙәк төшөрөлгән. *Ҡуҙалы итек.*

**ҠУҘБАШ** *и. диал. кар.* **торонбаш** [1].

**ҠУҘҒАЛАҠ** *и.* Ашай торған әскелтем япраҡлы үлән. *Ҡуҙғалаҡ бәлеше. Ҡуҙғалаҡ ашы. Ҡуҙғалаҡ ашау. Ҡуҙғалаҡ йыйыу.*

♦ **Ат ҡуҙғалағы** *кар.* **атҡолаҡ. Бесәй** (*йәки кәзә*) **ҡуҙғалағы** ҡуҙғалаҡтыҡы һымаҡ сәскәле, тар ғына оҙон япраҡлы ҡырсын үләне.

**ҠУҘҒАЛТЫУ** *к. кар.* **ҡуҙғатыу.**

**ҠУҘҒАЛЫУ** *к.* **1.** Урында ятҡан, торған йәки ултырған килеш хәрәкәтләнә башлау; ҡыймылдау, һелкенеү. *Фаиз, ятҡан ерендә генә ҡуҙғала биреп, ҡулдары менән һелтәнеп кошто ҡыуҙы.* В. Исхаков. *[Байғужа:] Мин ҡуҙғалам, аяҡтар, тәндәр ауырта. Аяҡ ойоған, күтәреп булмай.* Д. Юлтый. / Урындан тайыу; ҡаймығыу. *Бил ҡуҙғалған.* ■ *Уң аяҡтарым ҡуҙғалды һикереп аттан төшкәндә* (Халыҡ йырынан).

**2.** Хәрәкәткә килеү. *Етеҙ ҡуҙғалыу. Ҡуҙғалып тороу. Ҡуҙғалмай ятыу. Урындан ҡуҙғалыу.* ■ *Биле биртенеп, ҡуҙғала алмай ятҡан Юламан ҡарттың күңеленә хафалы уйҙар килә.* З. Бишева. *Килдебай урынынан ҡуҙғалыңҡырай биреп, тамаҡ ҡырып ҡуйҙы.* Ғ. Дәүләтшин. ■ *[Бай бисәһе:] Был ниндәй бәҫлек! Бәләкәй ҡуҙғалыбыраҡ, аяҡты ҡапылыраҡ алып атлап булмаймы!* Т. Хәйбуллин. / Юл барышында хәрәкәт итеү; барыу. *Былдай саҡта поездар ҙа бик тиҙ ҡуҙғала.* Ғ. Сәләм.

**3.** Китер өсөн хәрәкәткә килеү. *Ҡайтырға ҡуҙғалыу.* ■ *[Муйылбикә:] Юк-юк, ҡуҙғалмағыҙ, самауыр яңыртам.* Һ. Дәүләтшина. *Хафиз ҡарт .. сығып китте. Уның артынса Тайморзин да ҡуҙғалды.* М. Тажи. *[Илдар:] Яҙғы ташҡындың йәме — шаулап боҙ ҡуҙғалған мәлдә инде.* Ғ. Әхмәтшин. / Китергә юл алыу. *Урындан ҡуҙғалыу. Ҡуҙғала башлау.* ■ *Паровоз урман яңғыратып бер ҡысҡырҙы ла, әкрен генә ҡуҙғалып китте.* Т. Йәнәби. / Маҡсат, ниәт менән ҡайҙалыр юл алыу. *Халыҡ салғы, урак ҡулға алды, берәм-берәм эшкә ҡуҙғалды.* Ғ. Амантай.

**4.** *күсм.* Күтәрелеп, ҡалҡып, күмәк хәрәкәткә килеү. *Дошманға ҡаршы ҡуҙғалыу. Көрәшкә ҡуҙғалыу. Яуға ҡуҙғалыу.* ■ *Салауат ҡылысын ҡулға алды, халыҡ яуға ҡуҙғалды* (Халыҡ йырынан).

**5.** Барлыҡҡа килеү, бар булыу, хасил булыу (асыу, нәфрәт һ. б. тойғоға ҡарата). *Асыу ҡуҙ-*

*ғалыу. Ҡайғылар ҡуҙғалды. Йылы хистәр ҡуҙғалды. Бүсер ҡуҙғалыу. Теш һыҙлауы ҡуҙғалды.* ■ *Беҙҙең һалдаттар гәрләнәләр. Улар араһында асыу ҡуҙғала.* Д. Юлтый. *«Ҡыҙ» тинеңме — ҡан ҡыҙырға башлай, бәгрең һыҙлана, йәш йөрәктә әллә ниндәй тәмле уйҙар ҡуҙғала.* Ш. Бабич. *Маһикамал күңелендәге баяғы көнләшеү һәм ҡурҡыу төйөнө ҡапыл ҡуҙғалып китә.* Ш. Насыров. / Ғәмәлгә аша башлау, башланыу (берәй эш-хәрәкәт, күренешкә ҡарата). *Буран ҡуҙғала. Ел ҡуҙғала. Тауыш ҡуҙғала.* ■ *Ул [Ғәли ағай] ҡайтам тип торған ваҡытта ғына япон һуғышы ҡуҙғалып киткән.* Д. Юлтый. *Ике дуҫтың әңгәмәләре бик килешә. Яҙ көнө колхоз ойоштороу мәсьәләһе ҡуҙғалғас, Ғариф ағай беренселәрҙән булып ғариза яҙҙы.* Б. Бикбай.

♦ **Ене ҡуҙғалыу** *шул уҡ* **ене ҡубыу (***ҡар.* **ен). Күңел ҡуҙғалыу** *шул уҡ* **йөрәк ҡуҙғалыу (***ҡар.* **йөрәк).**

● *Сәбәпһеҙ таш та ҡуҙғалмай.* Мәҡәл. *Ир ҡуҙғалһа, ил ҡуҙғалыр.* Мәҡәл.

**ҠУҘҒАЛЫШ** *и.* **1.** Нимәнеңдер билдәле бер йүнәлештә ҡуҙғалыуы; хәрәкәт. .. *Ер өҫтөндәге һауа бер хәлдә генә тормай, һәр ваҡыт ҡуҙғалышта, ағымда була.* «Совет Башҡортостаны», 1966, 6 ғинуар.

**2.** Ҡыҫымға ҡаршы ҡуҙғалған хәрәкәт; бола. *Крәҫтиәндәр ҡуҙғалышы. Эшселәр ҡуҙғалышы.* ■ *Россиялағы крәҫтиәндәр ҡуҙғалышы һәм уларҙың юлбашсыларының тарихын өйрәнеү менән Пушкин айырыуса ҡыҙыҡһынды.* Ә. Усманов.

**ҠУҘҒАЛЫШЫУ** *ҡ.* Ҡуҙғалыу, хәрәкәт итә башлау (күмәк кешегә ҡарата). *Урал егеттәре ҡуҙғалышып, мылтыҡ алып, ҡылыс тағып, .. мендек беҙ аттарға.* Ғ. Әмири. *Урындан ҡуҙғалышҡас, Назаров эшселәр менән ҡул бирешеп хушлашты.* Н. Мусин.

**ҠУҘҒАТЫЛЫУ** *ҡ. төш. ҡар.* **ҡуҙғатыу** 1—3. *Ҡуҙғатылған мәсьәлә.* ■ *Ҡәҙерле ҡунаҡ хөрмәтенә бығаса тотолмай килгән түшәк-яҫтыҡтар ҡуҙғатылды.* Б. Бикбай.

**ҠУҘҒАТЫУ** *ҡ.* **1.** Урындан ситкә янтайтыу; шылдырыу, ҡыймылдатыу. *Бағананы ҡуҙғатыу. Мискәне ҡуҙғатыу.* ■ *Ҡарт дилбегәһен ҡуҙғатып: «Тшу, тшу, хайуан! Хәҙер етәбеҙ»,— тине.* Ғ. Дәүләтшин. *Егет ташты күтәрмәк булған — бик ауыр икән, көскә ҡуҙғатҡан* (Әкиәттән). / Урындан тайҙырыу; ҡаймыҡтырыу.— *Ҡунаҡбаев ауырып тора, билен ҡуҙғатҡан.* Ә. Вәли.

**2.** Хәрәкәткә килтереү. *Кәүҙәне ҡуҙғатыу.* ■ *Ул [Түрәбай] ҡулдарын көскә ҡуҙғатып, һыу һорап һондо.* Т. Хәйбуллин.

**3.** Ебәрер, алып китер өсөн хәрәкәткә килтереү. *Айбулат менән Мурзин: «Әйҙә инде...»,—* тип, Сәйетҡол менән Алтынбайҙы ла ҡуҙғатты. Һ. Дәүләтшина. *Хеҙмәтсе .. алты ылауҙы ҡуҙғатып алып та китә* (Әкиәттән).

**4.** Тынысһыҙлау, борсоу; тейеү. *Эй, Хәлим Искәндәров, ҡуҙғалма һис ел иҫмәйсә, һәм Троицкиҙы ла ҡуҙғатма, торһон иҫкесә.* Ш. Бабич.

**5.** *күсм.* Аяҡҡа баҫтырып, күмәк хәрәкәткә килтереү. *Халыҡты дошманға ҡаршы ҡуҙғатыу.* ■ *Ҡарттың сығышы залда ултырған кешеләрҙе .. дәррәү ҡуҙғатып ҡуйҙы.* М. Тажи.

**6.** Барлыҡҡа килтереү, бар итеү, ғәмәлгә килтереү. *Асыуҙы ҡуҙғатыу. Ҡайғыны ҡуҙғатыу. Мәсьәләне ҡуҙғатыу.* ■ *Был китап ҡуҙғатты миндә көслө тәҡлид шөһрәтен.* Ш. Бабич. *Ауыр яраңды һин, әсәй, һис тә ҡуҙғатма.* А. Игебаев. / Көсәйтеп ебәреү, өйәнәк хәленә килтереү. *Ауырыуҙы ҡуҙғатыу. Бүсерҙе ҡуҙғатыу. Тештең һыҙлауын ҡуҙғатыу.*

♦ **Күңелде ҡуҙғатыу** *шул уҡ* **йөрәкте ҡуҙғатыу (***ҡар.* **йөрәк). Ҡыл да ҡуҙғатмау** *шул уҡ* **ҡыл да ҡыбырлатмау (***ҡар.* **ҡыл). Һүҙ ҡуҙғатыу** *ҡар.* **һүҙ. Эш ҡуҙғатыу** *ҡар.* **эш.**

**ҠУҘҒАУ** *ҡ. ҡар.* **ҡуҙғатыу.** *Йөрәкте ҡуҙғау.* ■ *Күрмәйһеңме, унда уҫал көстәр, ҡуҙғап ҡара дауыл, елдәрҙе, ҡан йылғалар түгеп, уттар бөркөп, баҫып килә ярлы илдәрҙе.* Д. Юлтый.

**ҠУҘҒЫРЫҠЛАУ** *ҡ. ҡар.* **ҡуҙғытыу.** *Ҡуҙғырыҡлап бөтә майҙан халҡын, Аҡназар бай йөрөй ҡайҡайып.* М. Тажи.

**ҠУҘҒЫРЫУ** *ҡ. ҡар.* **ҡуҙғыу.** *Йөрәк ҡуҙғыра. Халыҡ ҡуҙғыра.*

**ҠУҘҒЫРЫШЫУ** *ҡ. урт. ҡар.* **ҡуҙғыу** 2.

**ҠУҘҒЫТҠЫС** *и.* **1.** *махс.* Тәьҫир итеп ҡуҙғытҡан, ярһытҡан сәбәп. *Химик ҡуҙғытҡыс. Яҡтылыҡ ҡуҙғытҡысы.*

**2.** *һөйл.* Ауырыуға сәбәп булған нәмә. *Гриптың ҡуҙғытҡысы.*

**ҠУҘҒЫТЫЛЫУ** *ҡ. төш. ҡар.* **ҡуҙғытыу.** *Ҡуҙғытылған умарта.*

**ҠУҘҒЫТЫУ** *ҡ.* Тейеп, яраны, һыҙлауыҡты һ. б. ауырттырыу, ярһытыу. *Һыҙлауыҡты ҡуҙғытыу. Яраны ҡуҙғытыу.* / *күсм.* Берәй төрлө тәьҫир яһап борсоу, тынысһыҙлау. *Йөрәкте ҡуҙғытыу.*

**ҠУҘҒЫУ** *ҡ.* **1.** Тышҡы тәьҫирҙән ярһыу, ауыртыу. *Яра ҡуҙғый.* ■ *Тән тиреһенә тейһәң, нервылар ҡуҙғый һәм шул ҡуҙғыу мейегә тапшырыла.* / *күсм.* Берәй төрлө тәьҫирҙән тынысһыҙланыу, ярһыу. *Йөрәк ҡуҙғый.*

**2.** Тынысһыҙланып, ярһып, ығы-зығы килеү; мыж килеү. *Ҡуҙғыған ҡырмыҫҡа иләүе. Бал ҡорттары ҡуҙғый.* ■ *Шәмбе көн һайғаҙаҡта атлы, йәйәүле кешеләр геүләп ҡуҙғый башланы.* Ф. Иҫәнғолов.

**ҠУҘҒЫШЫУ** *ҡ. урт. ҡар.* **ҡуҙғыу** 2. *Ҡуҙғышып китеү.*

**ҠУҘЛАНЫУ** *ҡ.* **1.** Ҡуҙға әйләнеү. *Янып ҡуҙланыу.*

**2.** *күсм.* Ҡуҙ һымаҡ булыу. *Тик мин беләм: тын ғүрҙә лә беҙҙең йөрәк ятыр ҡуҙланып.* Й. Солтанов.

**ҠУҘРАН** *с. иҫк.* Көҙөн ерҙә ҡалған орлоҡтан үҫкән; тыу. *Ҡуҙран ашлыҡ.* ■ *Ул йылды ҡуҙран арыш шәп булды.* Ә. Моратов.

**ҠУҘРАУ** [1] *ҡ.* Йомшаҡ ҡына, тоноҡ ҡына итеп тауыш биреү (ҡуй-һарыҡҡа ҡарата). *Ай, тыуған ер, тыуған ер, олатайҙар торған ер; йылҡылары сыңрап, һыйырҙары мөңрәп, ҡуй-һарығы ҡуҙрап, көтөү-көтөү йөрөгән ер.* «Урал батыр».

♦ **Ҡуйҙай ҡуҙрап** төрлө мәшәҡәткә иғтибар бирмәй, тыныс, һәүетемсә; көңгөр-ҡаңғыр. *Ҡуйҙай ҡуҙрап ғүмер итеү.*

**ҠУҘРАУ** [2] *ҡ.* Ҡуҙ булып яныу; ҡуҙланыу. *[Фәсхи] көлдөксәгә ҡуҙрап ятҡан утлы тимер*

*башын килтереп, тәмәке тоҡандырҙы.* Й. Солтанов.

**ҠУҘҺАЛҒЫС** *и. диал.* Һоҫҡо.

**ҠУҘЫ**[1] *и.* **1.** Һарыҡ бәрәсе. *Ҡуҙы тиреһе.* ■ *Сәскәләргә күмелеп, күк ҡуҙылар һикереп уйнай киске һалҡында.* Т. Йәнәби.

**2.** (*баш хәреф менән*) *астр.* Зодиактың береһе (Балыҡ һәм Буға йондоҙлоҡтары уртаһында урынлашҡан).

♦ **Ҡуҙы күҙ** *шул уҡ* **ҡуй күҙ** (*ҡар.* **күҙ**). *Ҡуҙы күҙле Буҙйегет был ерҙәрҙә бармы икән?* «Буҙйегет». **Ҡуҙы яурын башаҡ** дүрт ҡырлы осло башаҡ. *Ҡуҙы яурын ҡорос башаҡ — яҙа тартһам, .. миңә хурлыҡ.* «Күсәкбей».

**ҠУҘЫ**[2] [*рус.* кузов] *и.* **1.** Ҡабыҡтан яһалған ҡул кәрзине; тубал. *Бер ҡуҙы еләк.*

**2.** Ебәк ҡортоноң ҡурсаҡ көбө.

**ҠУҘЫЛАТЫУ** *к. йөкм. ҡар.* **ҡуҙылау.** *Хан .. Ерәнсә сәсәнгә тәкә килтереп биргән. «Мин килгәнгә тиклем ошоно ҡуҙылатып ҡуй!» — тигән* (Көләмәстән).

**ҠУҘЫЛАУ** *к.* Ҡуҙы килтереү, бәрәсләү.

**ҠУҘЫМТА** *и. диал.* Ҡуҙ. *Самауырға ҡуҙымта һалыу.*

**ҠУҘЫУ** *к.* **1.** Ярһып, боҙолоп көсәйеү, аҙыу (ауырыуға ҡарата).

**2.** Шашҡынланыу, көсәйеү. *Болот сыҡһа, ел ҡуҙыр; ямғыр яуһа, ер йыуыр* (Ҡобайырҙан).

**3.** Ярһыуланыу, ҡыҙыу. *Бәләкәстән генә башланған бәхәс ҡуҙҙы ла китте.*

♦ **Ене ҡуҙыу** *шул уҡ* **ене ҡубыу** (*ҡар.* **ен**[1]).

**ҠУЖРАЙЫУ** *к. ҡар.* **ҡожрайыу.** *Ҡужрайып ултырыу.*

**ҠУЖЫРМАҠ** *и.* **1.** Ниҙеңдер ярылып-ярылып, ҡытыршыланып торған өҫкө йөҙө; суғырмаҡ. *Төбөн ҡалын ҡужырмаҡ ҡаплаған ҡайын ҡуҙенә салынғайны Ҡасимдың кәйефе һүрелде.* Н. Мусин.

**2.** *күсм. диал.* Ҡутыр. *Тәнен ҡужырмаҡ баҫҡан.*

**ҠУЖЫРМАҠЛАНЫУ** *к.* Ҡужырмаҡлыға әйләнеү, ҡужырмаҡлы булыу. *Ҡужырмаҡланып тороу. Тәне ҡужырмаҡланған.*

**ҠУЖЫРМАҠЛАУ** *к.* Ҡужырмаҡлы итеү. *Ҡужырмаҡлап бөтөү.*

**ҠУЖЫРТМАҠ** *и. ҡар.* **ҡужырмаҡ.** *Имән ҡужыртмағы. Ҡужыртмаҡ менән ҡапланыу.*

**ҠУЗҒЫРТЫУ** *к.* Шау-шыу, сыр-сыу килтереү, шаулатыу. *Балаларҙы ҡузғыртыу.*

**ҠУЗҒЫРЫУ** *к.* Шау-шыу, сыр-сыу килеү; шаулау.

**ҠУЗҒЫРЫШЫУ** *к. урт. ҡар.* **ҡуҙғырыу.** *Бала-саға ҡузғырышты ла китте, һис ни ишетеп булмай.*

**ҠУЗЛА** [*рус.* козлы] *и.* **1.** Ҡырандастың күсер ултыра торған алғы урыны. *Ҡузлаға ултырыу.* ■ *Беҙ йоҡа ғына итеп бесән йәйелгән ҡырандасҡа ултырҙыҡ. Азамат ағай үҙе тимер тотҡа менән уратып алынған ҡузланан урын алды.* Й. Мостафин.

**2.** *һөйл.* Бүрәнә һалып быса торған махсус станок. *Ҡузла тояғы.* ■ *Яҙ еткәс, эшселәр өй бейеклек итеп ҡузла яһайҙар ҙа, бүрәнәне шунда мендереп, таҡта бысалар.* Ш. Янбаев.

**ҠУЗЫР** *и.* **1.** Ҡусҡарлап, селтәрләп яһаған биҙәк. *Шәл ҡузыры. Ҡузыр төшөрөү.*

**2.** Һырлы-һырлы семәр.

**3.** *диал.* Ҡыуыҡлы шәмдең селтәре.

**ҠУЗЫРЛАНЫУ** *к.* **1.** *төш. ҡар.* **ҡузырлау.** *Ҡузырланған ситек.*

**2.** *күсм. диал.* Ҡылансыҡланыу. *Сынаяҡты ватаһың инде ҡузырланып ултырып.*

**ҠУЗЫРЛАУ** *к.* **1.** Ҡусҡарлап, селтәрләп биҙәк яһау. *Шәлде ҡузырлап бәйләү.*

**2.** Һырлап семәр яһау. *Ижауҙы ҡузырлау.*

**ҠУЗЫРЛЫ** *с.* Ҡузыр (1 мәғ.) төшөрөлгән, ҡузыр яһалған. *Ҡузырлы ижау.*

**ҠУЗЫРТЫУ** *к. һөйл.* Һүҙҙе ҙурайтып, оҙонға һуҙыу; сурытыу.

**ҠУЙ**[1] *и.* Оса майы яҫтыҡланып торған үҙенә бер төрлө һарыҡ. *Шешәк ҡуй. Ҡуй ите. Ҡуй майы. Ҡуй тиреһе. Ҡуй көтөүе. Ҡуй көтөүсеһе.* ■ *Хужа ҡатын таныш-белештәрен тиҙ генә саҡырып, һимеҙ ҡуй һуйып, егет менән ҡыҙҙы ҡушып та ҡуйған* (Әкиәттән).

♦ **Ҡуй йылы** мөсәл йыл иҫәбендә һигеҙенсе йыл (*ҡар.* **мөсәл**). **Ҡуй күҙ** *ҡар.* **күҙ.** *Оҙон ғына буйлы, аҡ сырайлы, ҡара ғына ҡашлы, ҡуй күҙле* (Халыҡ йырынан). **Ҡуй өҫтөнә турғай оялай** бик бай, мул тормошҡа ҡарата әйтелә.

● *Иҫәпһеҙҙең ҡуйы теүәл.* Мәҡәл. *Йылҡы данлыҡ, ҡуй — байлыҡ.* Әйтем.

**ҠУЙ**[2] *ымл.* Күберәк ҡылымдың юҡлыҡ формаһы менән йәнәш килеп, кире ҡағыуҙы, ҡаршы төшөүҙе, тыйыуҙы белдерә. *Ҡуй, уҡыма. Ҡуйығыҙ, шаярмағыҙ. Ҡуй, булмаҫ.* ■ *[Гөлнур — Сәғиҙәгә:] Ҡуй-ҡуй, илама, бер беҙгә генә килгән ҡайғымы ни.* М. Тажи.

♦ **Ҡуй әле** ризаһыҙлыҡты, үтенесте белдерә. *— Ҡуй әле, Таминко, шаярма әле.* Д. Юлтый. **Ҡуй инде** үкенесте, зарҙы белдерә. *[Ғатаулла:] Элекке тормошто ҡуй инде уны, һөйләп тораһы ла юҡ.* Р. Солтангәрәев. *[Илбай:] Һә-әй, ҡуй инде, шул Хәбибуллиндың сонтого сонтоҡ булмаһы, .. башҡа бер ҡаза булды.* Х. Ғиләжев.

**ҠУЙ**[3] *киҫ. диал. ҡар.* **бит**[3]. *[Үмәр:] Алыҫ, тип ни, ат етмәҫлек ер түгел ҡуй.* Һ. Дәүләтшина.

**ҠУЙҒЫЛТ** *с.* Бик ҡуйы булмаған, шыйығыраҡ ҡуйы. *Ҡуйғылт батҡаҡ.*

**ҠУЙҒЫЛТЛАНЫУ** *к.* Ҡуйғылт хәлгә килеү.

**ҠУЙҘЫРЫУ** *к. йөкм. ҡар.* **ҡуйыу** 1—8, 10, 12, 13. *Ҡул ҡуйҙырыу. Теш ҡуйҙырыу.* ■ *[Миңлебай:] Бының ярты аҡсаһына өй ҡыйыҡлайбыҙ, мейес һалдырабыҙ, тәҙрә ҡуйҙырабыҙ.* Т. Йәнәби.

**ҠУЙҠЫМ** *и. һөйл.* Ҡымыҙ, ҡоротлаған һурпа кеүек нәмәнең төбөндә ҡалған ҡуйыһы. *Ҡымыҙҙың ҡуйҡымын ҡалдырмай эс.*

**ҠУЙМЫР: ҡуймыр күҙ** ҙур, матур ҡуңыр күҙ. *Ҡыҙ матурҡайҙары ай шул була — ҡуймыр күҙле, ҡара ҡашлыһы* (Халыҡ йырынан).

**ҠУЙСЫ**[1] *и.* Ҡуй көтөүсеһе. *Һөйөнөстөң бала сағындағы тағы бер ҡыуанысы, ауылда һарыҡ һуйғанда һарыҡ һуйған кешенең ҡуйсыны ашҡа саҡырып, үҙен эшләп тапҡан итеп хис итеүе .. ине.* Ғ. Дәүләтшин.

● *Килендең — аяғынан, ҡуйсының — таяғынан.* Мәҡәл. *Ҡуйсыһы күптең ҡуйы харам үлер.* Мәҡәл.

**ҠУЙСЫ**[2] *ымл. кар.* **ҡуй**[2].— *Ҡуйсы, әсәй, ҡуйсы, әсәй, күҙ йәшемде күрсе, әсәй.* «Алпамыша».

**ҠУЙТЫР** *и.* Тышланмаған тун; тире тун. *[Низам:] Бисәкәйҙе әйтәм әле. .. Кешеләр йөк-йөк иген һатып, өй эсен кейем, тауар менән тултырғанда, һин төпһөҙ быйма, йыртыҡ бүрек, алама ҡуйтыр менән ялтырап йөрөйһөң,— тип кыш буйына теңкәне ҡоротто.* М. Тажи. *Иҙелбай ағай урынынан торҙо ла ҡуйтырының йомро төймәләрен ҡаптыра башланы.* Х. Мохтар. *Ҡыптыр-ҡыптыр ҡуйтырыңды ҡыптырлатып кейерһең* (Халыҡ йырынан).

● *Яҡшы ҡатын йорондан элкеп ҡуйтыр сығарыр.* Мәҡәл.

**ҠУЙ-ҺАРЫҠ** *и. йыйн.* Ҡуй һәм һарыҡ малы. *Ай, тыуған ер, тыуған ер, олатайҙар торған ер; йылҡылары сыңрап, һыйырҙары мөңөрәп, ҡуй-һарыгы ҡуҙрап көтөү-көтөү йөрөгән ер.* «Урал батыр».

**ҠУЙЫ** *с.* **1.** Айырым берәмектәре үҙ-ара бик яҡын; тығыҙ, йыш; *киреһе* һирәк. *Ҡуйы ағаслыҡ. Ҡуйы сәс. Ҡуйы үлән.* ■ *Ҡуйы ҡара керпегең, бирсе миңә бөртөгөн. Үҙең миңә булмаһаң да, төҫөң итеп йөрөтөрмөн* (Халыҡ йырынан). *Бара торғас, ул [Аҡъял батыр] әҙәм үткеһеҙ ҡуйы ҡараңғы урманға килеп ингән* (Әкиәттән). *Ағас япрағы ҡуйы булһа, ашлыҡ башлы булыр.* Һынамыш.

**2.** Ҡатнашҡан, аралашҡан матдәһе урта шыйыҡлыҡ самаһынан артыҡ; *киреһе* шыйыҡ. *Ҡуйы аш. Ҡуйы бутҡа. Ҡуйы ҡаймаҡ. Ҡуйы өйрә.* / Ныҡ баҙыҡ (төҫкә ҡарата). *Ҡуйы ҡара. Ҡуйы һор.* ■ *Урамдың арғы башы ҡарағусҡыл, ҡуйы зәңгәр булып күренә.* С. Агиш.

**3.** Үтә күренмәҫлек, яҡтылыҡ үтмәҫлек тығыҙ. *Ҡуйы болот. Ҡуйы быу. Ҡуйы төтөн.* ■ *Бик ҡуйы томан булғанлыҡтан, бер нәмә лә күренмәй.* Ш. Хоҙайбирҙин. *Ҡуйы ҡараңғылыҡ төшөп, юл бөтөнләй күренмәҫ булды.* С. Ханов.

♦ **Ҡуйы сәй** сәйҙе күп һалып бешерелгән сәй. **Ҡуйы һөт** ҡаймағы айыртылмаған һөт.

● *Ашты бергә бешерһәң ҡуйы була.* Мәҡәл.

**ҠУЙЫЛАНЫУ** *ҡ. ҡар.* **ҡуйырыу.** *Ағастар япраҡ ярып, урман ҡуйыланғансы яңы делянка асырға, ҡыш ҡырҡылғанын сыбыҡ-сабыҡтан таҙартып ҡалырға кәрәк ине.* Ф. Әсәнов.

**ҠУЙЫЛМАЛЫ** *с.* Алып ҡуйыла торған. *Ҡуйылмалы тәҙрә. Ҡуйылмалы теш.*

**ҠУЙЫЛТМАҠ** *и.* Ҡаймаҡ һалып, һөткә шыйыҡлап иҙелгән йәш ҡорот. *Ҡуйылтмаҡ яһау. Ҡуйылтмаҡ ялау.*

**ҠУЙЫЛТМАҠЛАНЫУ** *ҡ.* Ҡуйғылт хәлгә килеү; ҡуйғылтланыу. *Юлдар бигерәк ҡуйылтмаҡланып, иҙелеп бөткән ине.* Ш. Янбаев.

**ҠУЙЫЛЫҠ** *и.* **1.** Һөттөң сифатын билдәләй торған күрһәткес. *Һөттөң ҡуйылығы. Ҡуйылығын үлсәү.*

**2.** Билдәле майҙандағы үҫемлек һанын билдәләй торған күрһәткес. *Үлтыртылған ағастың ҡуйылығы.* ■ *Уңыштың әҙмышын үҫемлектәрҙең ҡуйылығы хәл итә.* «Совет Башҡортостаны», 1970, 30 май.

**ҠУЙЫЛЫУ** *ҡ. төш. ҡар.* **ҡуйыу.** *Алға ҡуйылыу. Бәйләп ҡуйылыу. Йәйеп ҡуйылыу. Өйөп ҡуйылыу. Сығарып ҡуйылыу. Ташып ҡуйылыу. Уйлап ҡуйылыу. Ябып ҡуйылыу. Яҙып ҡуйылыу.* ■ *Бөтә нәмә ыҫпай, йыйнаҡ итеп урынлы урынына ҡуйылған.* Ғ. Дәүләтшин. *Көлтәләрҙән ҙурат ҡуйылды.* М. Кәрим.

**ҠУЙЫН** *и.* **1.** Түш менән ҡултыҡ араһындағы урын. *Ҡуйынды ҡымтыу.* ■ *Төнъяҡтан әсе ел иҫә, Емештең ҡуйынына үрмәләй.* З. Биишева. / Шул урындағы кейем араһы. *Ҡуйындан алыу.* ■ *Ҡарт йөҙ һумды ҡуйынына тыға* (Әкиәттән).

**2.** Ҡолас эсе; ҡосаҡ. *Ҡуйынға алыу. Ҡуйынға инеү.* ■ *Бүләкбай ҡурҡышынан әсәһенең ҡуйынына һырынды.* Т. Хәйбуллин. *Төлкө тундан йылы, тиҙәр, һөйгән йәрҙең ҡуйыны* (Халыҡ йырынан).

**3.** *күсм.* Ниҙеңдер солғап, уратып алған эсе. Ер ҡуйыны. Ҡәбер ҡуйыны. Тәбиғәт ҡуйыны. Урман ҡуйыны. ■ *Урал тауҙың ҡуйынында алтын да, баҡыр ҙа бар* (Ҡобайырҙан). *Һаҡмар ҙа һыуҙың һай буйында, бесән сабам ярҙың ҡуйынында* (Халыҡ йырынан).

♦ **Ер ҡуйынына инеү** үлеү. **Ҡуйын дәфтәре** кәрәкле мәғлүмәттәр теркәп бара торған хәтер дәфтәре; блокнот. *Хатты тағы түш кеҫәһенә, ҡуйын дәфтәре эсенә һалып ҡуя.* Д. Юлтый. **Ҡуйын кеҫәһе** кейемдең эске яғына һалынған кеҫә. *Әсәһе уның ҡуйын кеҫәһенә әллә ниндәй доғалар текте, Вәхит ҡайһы бер китаптарын алды.* М. Ғафури. **Ҡуйында йылан аҫрау** аҫтыртын, яуыз кешене янында тотоу. *[Рәхимә:] Имаметдин белеп әйтә ул: «Ҡуйынығыҙҙа йылан аҫрайһығыҙ»,— ти. Ысын шул. Ҡайһылай ҡаты сағаһың!* Һ. Дәүләтшина. **Ҡыҙ ҡуйынына инеү** ҡыҙ менән ҡушылыу. *Ҡыҙ ҡуйынына ингән саҡта бүркең ҡамалы булһын* (Халыҡ йырынан).

● *Йәш ҡуйынында ҡамсы бар, ҡамсыһынан бал тамыр.* Әйтем. *Илдең эше ирҙең муйынында, ирҙең эше илдең ҡуйынында.* Әйтем. *Туйға барһаң, туйып бар, ҡуйыныңа ҡумәс тығып бар.* Әйтем.

**ҠУЙЫРТМАҠ** *и. диал.* Ҡуйылтмаҡ.

**ҠУЙЫРТМАҠЛАНЫУ** *ҡ. диал.* Ҡуйылтмаҡланыу.

**ҠУЙЫРТЫЛЫУ** *ҡ. төш. ҡар.* **ҡуйыртыу.** *Ҡуйыртылған һөт.*

**ҠУЙЫРТЫУ** *ҡ.* **1.** Йыш итеү; йышайтыу. *Урманды ҡуйыртыу.*

**2.** Ҡуйы хәлгә килтереү. *Ашты ҡуйыртыу. Бутҡаны ҡуйыртыу.*

**ҠУЙЫРЫҠ**[1] *и.* Ҡуйы булып ойошҡан матдә. *Ҡан ҡуйырығы.*

**ҠУЙЫРЫҠ**[2] *с. диал.* Буръяҡ. *Ҡуйырыҡ һыу. Ҡуйырыҡ булыу.*

**ҠУЙЫРЫҠЛАУ** *ҡ. диал.* Буръяҡлау. *Һыуҙы ҡуйырыҡлау.*

**ҠУЙЫРЫУ** *ҡ.* Айырым берәмектәре яҡын хәлгә килеү; йышайыу; *киреһе* һирәгәйеү. *Урман ҡуйырған.* ■ *Ә яҙ килһә, ап-аҡ шәл ябынып, баҡсаларҙа сирень ҡуйыра.* Ғ. Сәләм.

**ҠУЙЫУ** *ҡ.* **1.** Нимәнелер текә, вертикаль торған хәлдә беркетеү, урынлаштырыу. *Баҫҡысты стенаға ҡуйыу. Китаптарҙы кәштәгә ҡуйыу.* ■ *Беҙҙең генә урам телеграмм, бағанаһын уның кем ҡуйған* (Халыҡ йырынан). / Ҡайҙалыр урынлаштырыу, берәй ергә йәйләштырыу. *Авто-*

*мобилдә гаражға ҡуйыу. Малды кәртәгә ҡуйыу. Сынаяҡты өҫтәлгә ҡуйыу. Креслоны тәҙрә янына ҡуйыу. Һандыҡты иҙәнгә ҡуйыу.* / Ашау өсөн ултыртыу. *Ҡунаҡ алдына ҡуялар һыйҙарҙың иң татлыһын.* М. Кәрим.

**2.** Берәй төрлө эшкә тәғәйенләү, билдәләү, ниҙер эшләргә ҡушыу (ғәҙәттә аяҡ өҫтө). *Станокка ҡуйыу. Көтөүгә ҡуйыу. Һабан һөрөүгә ҡуйыу. Һаҡҡа ҡуйыу.* / Берәй төрлө урынға, вазифаға тәғәйенләү, берәй вазифалы кеше тәғәйенләү. *Председатель итеп ҡуйыу. Уҡытыусы итеп ҡуйыу.* ■ *Яуыз кантондарҙы ҡуя икән Рәсәй генә тигән батшалыҡ* (Халыҡ йырынан).

**3.** *һөйл.* Берәй ергә, берәйһенә тороу өсөн урынлаштырыу, яйлаштырыу. *Квартираға ҡуйыу.* ■ *Аҡтарҙың һалдаттары ишле генә ине. Шунлыҡтан уларҙы өй беренсә таратып, йорт һайын фатирға ҡуйҙылар.* В. Исхаҡов.

**4.** Билдәле бер торошҡа килтереү, берәй төрлө итеп яйлаштырыу. *Аяҡты аяҡҡа ҡуйыу. Ҡулды күкрәккә ҡуйыу. Үксәләрҙе бергә ҡуйыу.* ■ *Ғәйшә бойоғоп, Ҡадир күкрәгенә башын ҡуйҙы.* Ғ. Амантай. *Биткәйеңде ҡуйсы биткәйемә, күҙ йәшебеҙ бергә түгелһен.* Х. Ғәбитов. / Ҡайһы бер әйтемдәр берәй төрлө эш-хәрәкәт өсөн тейешле, дөрөҫ торошҡа, хәлгә килтереүҙе белдерә. *Сәғәтте ҡуйыу (ваҡытты дөрөҫ күрһәтерлек итеп телен күсереү).*

**5.** Эш-хәрәкәт өсөн беркетеү, урынлаштырыу. *Звонок ҡуйыу. Телефон ҡуйыу. Үтекте ҡуйыу.* ■ *Өсөнсө тиҙлеккә ҡуйып, ЗИС менән елһәң әгәр, ай елерһең, етә алмаҫһың сиктән сигенә кәҙәр.* Р. Ниғмәти. / Яһағанда, йүнәткәндә, төҙәткәндә нимәгәлер беркетеү. *Йортҡа тәҙрә ҡуйыу. Күлдәккә яға ҡуйыу. Тәҙрәгә быяла ҡуйыу. Һандыҡҡа йоҙаҡ ҡуйыу.* ■ *Ҡапҡа бағаналары ултыртылған, ҡапҡа ҡуйып өлгөрмәнеләр.* Н. Мусин.

**6.** Яҙып, һыҙып күрһәтеү, күсермәһен яһау. *Билдә ҡуйыу. Нөктә ҡуйыу. Мисәт ҡуйыу. Тамға ҡуйыу. Хәреф ҡуйыу.* ■ *Ахырына ҡуйған хоҙай үҙ имзаһын.* Ш. Бабич. / Баһа билдәһе менән күрһәтеү. *Бишле ҡуйыу. Икеле ҡуйыу.*

**7.** Нимәгәлер хаҡ, баһа билдәләү. *Баһа ҡуйыу. Хаҡ ҡуйыу.* ■ *Юҡ, Сәлмән дә белмәй түгелдер шул, ҡутәренке ҡуйған баҙарын.* Ғ. Сәләм. / Ыңғай йәки кире баһа биреү. *Үҙеңде юғары ҡуйыу. Кешене түбән ҡуйыу. Ҙурға ҡуйыу. Шәпкә ҡуйыу.*

**8.** Ниндәйҙер бер мәсьәләне ҡуҙғатыу, хәл итергә тәҡдим итеү. *Мәсьәләне уртаға ҡуйыу. Тауышҡа ҡуйыу. Маҡсат ҡуйыу. Һорау ҡуйыу. Шарт ҡуйыу. Партия идеология эшен тағы ла көсәйтеү бурысы ҡуя.*

**9.** Берәйһе өсөн берәй төрлө хәл, шарт, обстановка тыуҙырыу, берәй төрлө хәлгә, торошҡа килтереү. *Ирек ҡуйыу. Рөхсәт ҡуйыу. Ыңғай ҡуйыу. Яй ҡуйыу.* ■ *Мин, ысынлап та, был урында үҙемде түбән ҡуйҙым.* С. Агиш. *[Урал — Шүлгәнгә:] Дан эҙләргә теләнең — теләгеңә юл ҡуйҙым.* «Урал батыр».

**10.** Берәй төрлө ашамлыҡ, эсемлек әҙерләү процесының бер өлөшөн башҡарыу. *Ҡамыр ҡуйыу. Сәй ҡуйыу. Аш ҡуйыу.* ■ *Тайба самауыр ҡуйып йөрөй. Бәзкәй икмәк иҙә.* С. Агиш.

**11.** Ниндәйҙер эш-хәлде дауам иттереү, туҡтатмау, аҙағына еткерергә тырышыу. *Алдына алғанын ҡуймай. Үҙ һүҙен ҡуя белмәй.*

**12.** Берәй төрлө тамашаны сәхнәгә сығарып күрһәтеү. *Спектакль ҡуйыу. Концерт ҡуйыу.* ■ *Был йылдарҙа ул [Арслан Мөбәрәков] Назар Нәжмиҙең «Яҙғы йыр» исемле пьесаһын ҙур уңыш менән сәхнәгә ҡуйҙы.* Ғ. Әхмәтшин.

**13.** *һөйл.* Мәйетте күмеү, ерләү. *Егет ата-инәһен тәрбиәләп ҡуйғас, тормош хәстәрлектәре күрә башлай* (Әкиәттән).

**14.** *-п, -а* формаһындағы хәл ҡылымға ҡушылып, ярҙамлыҡ ҡылым сифатында: а) һөҙөмтәле эш-хәлде белдерә. *Баҫтырып ҡуйыу. Килтереп ҡуйыу. Һалып ҡуйыу. Асып ҡуйыу. Ҡороп ҡуйыу. Оҙатып ҡуйыу. Теүәлләп ҡуйыу. Яһап ҡуйыу.* ■ *Егет атты кире һарайға индереп ҡуйған* (Әкиәттән). *Батша кесе ҡыҙы менән Ҡыҙрасты мунса кеүек кенә бер өйгә ябып ҡуя* (Әкиәттән); б) эш-хәрәкәттең дауамһыҙлығын, ҡапыллығын белдерә. *Иламһырап ҡуйыу. Көлөп ҡуйыу. Ҡалтырап ҡуйыу. Ҡарап ҡуйыу. Ҡурҡып ҡуйыу. Уйлап ҡуйыу. Иғтибар итә ҡуйыу. Һорай ҡуйыу.* ■ *Хозяйка .. ишек асты. Минең тын алыуҙан уҡ шикләнә ҡуйҙы.* С. Агиш; в) төп ҡылымдың мәғәнәһенә ҡурсыу, киҫәтеү төҫмөрө бирә. *Күҙ тейеп ҡуймаһын. Харап булып ҡуймаһын.* ■ *[Зәйнәп:] Сәйҙел, улай тәрәнгә китмә, батып ҡуйырһың йә маҡтанып.* Ғ. Сәләм; г) заман, зат буйынса ярашып, төп ҡылымдың мәғәнәһен көсәйтә. *Алды ла ҡуйҙы. Бармай ҙа ҡуя. Килмәҫ тә ҡуйырҙар. Онота алмай ҙа ҡуя.* ■ *Әсәһе ҡыҫтай, теге [бала] ашамай ҙа ҡуя.* К. Мәргән. *Шул ерҙә ҡарт күҙҙән юғалған да ҡуйған* (Әкиәттән).

◆ **Буш ҡуймау** буш ҡалдырмау, буш итмәү. *Мин дә буш ҡуйманым, .. яуап ҡайтара торҙом.* И. Насыри. **Ҡайҙа ҡуйырға белмәү** 1) нишләтергә белмәй аптырау. *[Зөлхизә] бәхетһеҙ башын ҡайҙа ҡуйырға белмәй.* Н. Иҙелбай; 2) йәшерә алмай тышҡа сығарыу. *[Сәриә] асыуын ҡайҙа ҡуйырға белмәй .. төҫөн үҙгәртте.* Я. Хамматов. **Ҡойоп ҡуйған кеүек** *ҡар.* **ҡойоу. Ҡойоп ҡуйыу** *ҡар.* **ҡойоу. Ҡул ҡуйыу** *ҡар.* **ҡул** [1]. **Өҙмәй ҙә ҡуймай** бер нәмәне ҡат-ҡат туҡыу, ҡабатлау. *Бер һүҙҙе өҙмәне лә ҡуйманы.* **Үҙе белеп, үҙе ҡуйып** бер кем менән дә кәңәшләшмәй, үҙ алдына.— *Революцияға тиклем беҙҙең ауылда үҙе белеп, үҙе ҡуйып, кеше менән бик ҡатышмай ғына йәшәгән бер ағай бар ине.* Ә. Вахитов.

**ҠУЙЫШЫУ** *к. урт. ҡар.* **ҡуйыу** 1—3, 5—7, 12, 13. *Әхмәҙулла бабай бөгөн бушаманы. Ул ауылдың иң ҡарт кешеһе йөҙ ҙә ун һигеҙ йәшлек Шафиҡ аҡһаҡалды ҡуйышып йөрөнө.* Ә. Вахитов.

◆ **Вәғәҙә** (*йәки* **һүҙ**) **ҡуйышыу** вәғәҙәләшеү.

**ҠУҠАЙЫУ** *к.* Түңгәк кеүек ҡалҡыу; суҡайыу. *Ҡуҡайып түр башында ултырыу. Ҡуҡайып ат өҫтөндә ултырыу.*

**ҠУҠАНАЙ** *и. диал.* Ойошоп бешкән туҡмас.

**ҠУҠАҢЛАУ** *к.* **1.** Бер иңкәйеп, бер туңҡайыу, суҡаңлау. *Ҡуҡаңлап йөрөү.* ■ *Рәзилә тәүҙә бына-бына осоп төшөр кеүек ҡуҡаңлабыраҡ барһа ла, эйәрҙә ултырырға ғәҙәтләнеп тә китте.* Н. Мусин.

**2.** Ултырып сыҙамай, бер эйелеп, бер ҡалҡыу. *Ҡуҡаңлап ултырыу.*

**ҠУҠРАЙТЫУ** *к.* **1.** Бейек итеп ҡалҡытыу; һерәйтеү. *Ҡуҡрайтып ҡуйыу.*

**2.** *күсм.* Эреләндереү, маһайтыу; ҡупайтыу. *Маҡтап ҡуҡрайтыу.*

**ҠУҠРАЙЫУ** *к.* **1.** Бейек булып ҡалҡыу; һерәйеү, сусайыу. *Ана башҡорт ауылдары. Һәр береһендә берәр, икешәр мәсет ҡуҡрайып тора.* Д. Юлтый. *Йөк өҫтөнә ҡуҡрайып менеп ултырҙыҡ.* Ғ. Ғүмәр.

**2.** *күсм.* Түште киреп, башты сөйөп, кәпәренеү; ҡупайыу. *Ҡуркә кеүек ҡуҡрайыу.* ■ *[Ильяс:] Намыҫлана белеү — намыҫ. Юҡҡа намыҫланыу ҡуҡрайыу була.* Б. Бикбай. *Әтәс ҡуҡрайып, тауыҡтар алдында маҡтана башлай* (Әкиәттән).

**ҠУҠРАЙЫШЫУ** *к. урт. ҡар.* **ҡуҡрайыу.** *Ҡуҡрайышып йөрөү.* ■ *Ауылдың ҡаҙ, өйрәктәре ҡойолған игенгә мас булып, ҡуҡрайышып йөрөйҙәр.* М. Тажи.

**ҠУҠШЫН** *с. һөйл.* Ҡутыры ҡойолған ялтыр (башҡа ҡарата).

● *Ҡуҡшын таҙҙа сәс үҫмәҫ.* Әйтем.

**ҠУҠЫЙ** *и. диал.* Ҡуҡыуыс. *Был туғайҙа .. ҡуҡый, аҡсарлаҡтар, ябыҡ селән, сыпҡай — бары ла бар.* К. Даян.

**ҠУҠЫЙЫҠ** *и. диал.* Ҡуҡыуыс.

**ҠУҠЫР** *с. диал.* Ҡупым.

**ҠУҠЫРАУЫҠ** *и. диал.* Күмәгәй.

**ҠУҠЫУЫС** *и.* Турғай һымаҡтар ғаиләһенә ҡараған күрәнһыу арҡалы, зәңгәрһыу түшле, тауыҡҡа оҡшаған ваҡ һыу ҡошо (**һыу** буйында ҡамышлыҡ араһында була); һыу тауығы.

**ҠУҠЫШ** [*рус.* кукиш] *и. һөйл.* Киҫкен кире яуапты, мыҫҡылды белдергән өс бармаҡ ишараһы. *Ҡуҡыш күрһәтеү.*

**ҠУЛ** [1] *и.* **1.** Кеше кәүҙәһендә яурын башынан бармаҡ остарына тиклемге булған ике ағзаның береһе. *Уң ҡул. Һул ҡул. Һыңар ҡул. Ҡул болғау.* ■ *Бер рәсемдә Ленин тора, уң ҡулын һуҙып алға.* Р. Ниғмәти. / Шул уҡ ағзаның ҡушҡарҙан алып, бармаҡ яҡ осо. *Ҡулға тотоу. Ҡулдан төшөү.* ■ *Ялан ҡуллы күсер егет дилбегәне тотҡан урап.* М. Кәрим. *Ҡулға ҡорал тотҡан, ә йөрәккә Ленин хисен һалған халҡыбыҙ — бәхет алды, шатлыҡ алды, Ватан яулап алды ҡан түгеп.* Р. Ниғмәти. **Ҡул багажы** ҡулға тотоп ҡына йөрөтөлә торған еңел багаж. **Ҡул ҡабы** *ҡар.* **ҡап** [1]. **Ҡул пулемёты** күтәреп йөрөтмәле еңел пулемёт. **Ҡул сәғәте** ҡулға таға торған сәғәт. **Ҡул һуғышы** ике ғәскәр араһындағы ҡулға-ҡул барған йәки һалҡын ҡорал менән булған һуғыш. *Ҡул һуғышында Фәйзулла үҙ ҡулы менән әллә нисә фашисты дөмөктөрҙө.* Х. Мохтар. **Ҡул һырты** ҡулдың усҡа тиҫкәре яғы.

**2.** «Уң» йәки «һул» һүҙе менән килгәндә, тарафты, йүнәлеште, яҡты белдерә. *Тыштан ингәс, уң ҡулда бәләкәс кенә мейес.* Ғ. Дәүләтшин. *Ҡашлаҡ буйлап барам. Уң яҡ ҡулда, әрәмәлек араһында, бейек һарай күренде.* «Совет Башҡортостаны», 1985, 11 март. / Шул уҡ шартта, ғәскәр сафынан теге йәки был яҡ ҡанатын аңлата. *[Арыҫлан] сиреүҙең уң ҡулын Ырғыҙ тамағына, һул ҡулын Ҡарагеше тауына, урта ҡулын завод ҡурғанына йүнәлтте.* Ғ. Ибраһимов.

**3.** Кеше хеҙмәтенең символы, шулай уҡ хеҙмәт, кеше эшмәкәрлеге үҙе символ булараҡ ҡулланыла. *Оҫта ҡул.* ■ *Ир ҡулы теймәгәнгә, йорт ҡаралтыһы туҙҙы. Ауыл ҡотһоҙланды.* Ә. Моратов.

**4.** Кеше көсө менән хәрәкәткә килтерелә торған ҡорамалдарҙы белдергән һүҙ бәйләнештәр составына инә. *Ҡул арбаһы. Ҡул быҫҡыһы. Ҡул машинаһы. Ҡул тирмәне.* ■ *Иштуған уларҙы [тоҡтарҙы] ҡул арбаһына тейәп, өйгә алып ҡайтып китә.* З. Биишева. *Башаҡ ашлығын ҡул тирмәне менән тартып, көн дә бутҡа, өйрә бешерә башланыҡ.* В. Әхмәҙиев.

**5.** *күсм.* Айырым кешегә хас яҙыу рәүеше, почерк. *[Тимеркәй:] Мә, уҡып сыҡ, Димка. .. Ҡулын танынйыңмы? Заһиҙа ҡулы бит.* Д. Исламов. *[Хаттың] Әбделислам ахун остаҙдан булыуы бик ихтимал. Тик уның ҡулы түгел, ят ҡул.* «Батыршаның хаты».

**6.** Кемдеңдер ихтыярында, ҡарамағында булғанды белдереү өсөн ҡулланыла. *Кеше ҡулына ҡалыу. Ят ҡулында булыу.* ■ *Беҙҙең ҡулда хәҙер кеүәтле тракторҙар, комбайндар, автомашиналар бар.* «Совет Башҡортостаны», 1969, 22 март.

♦ **Алтын ҡуллы** *ҡар.* **оҫта ҡуллы. Артына ҡулы етмәй** *шул уҡ* **ҡулы артына етмәй** (*ҡар.* **арт**). **Буш ҡул** һис бер нәмәһеҙ. *Буш ҡул барыу.* ■ *Ғәбәс ағай һунарға сыҡһа буш ҡул менән ҡайтмай.* **Еңел ҡул менән** 1) бер ниндәй ҡыйынлыҡһыҙ, анһат. *Ҡайҙа аҡса күп — .. унда еңел ҡул менән кәсеп итеүселәр ябырыла.* Ғ. Ғүмәр; 2) берәй эш башлағанда уңыш теләп әйтелә. **Етеҙ ҡуллы** эшкә уңған; эшсән, булдыҡлы. **Ике ҡулһыҙ** кеше көнлө ярҙамсыһыҙ, сараһыҙ. *[Юлтыев:] Эшеңдең бисмиллаһы колхозда партия ойошмаһы төҙөү булырға тейеш. Шунһыҙ һин ике ҡулһыҙ.* Ғ. Әмири. **Ике ҡулға бер эш** күп эшкә бүлгеләнмәй, бер генә эште башҡарғанда әйтелә. *[Димский — Илдарға:] Мин һеҙҙе, һеҙҙең үҙегеҙҙе, эшкә саҡырырға килдем. Баянист! Ике ҡулыңа бер эш һәм аҡсаһын күрәп алырһың.* Ғ. Әхмәтшин. **Йүгерек ҡуллы** кеше нәмәһенә тейеүсән; уғры. **Йылы ҡулдан** *ҡар.* **йылы** [1]. **Йәнде ҡулға тотоп** (*йәки* **алып**) *ҡар.* **йән. Кеше ҡул(ы) теймәгән** берәү ҙә ҡағылмаған, оронмаған, теүәл; саф хәлдәге. *Ҡыҙҙар бер уйпатҡа туҡтанылар ҙа, кеше ҡулы теймәгән ер еләктәрен ашығып-ашығып тирергә тотондолар.* Ш. Шәһәр. **Ҡаты ҡуллы** бик аяуһыҙ, талапсан. *[Кашапов:] Мин үҙем йомшаҡ тәбиғәтле. Шуғалырмы, ҡаты ҡуллы кешене яратам.* Я. Вәлиев. **Ҡоро ҡул** *ҡар.* **буш ҡул. Ҡул аҡсаһы** *ҡар.* **аҡса. Ҡул алмашы** 1) кешене алмаштырып, урынында ҡалып эшләр кеше. *Ҡыҙ кеше .. ҡул алмашы була алмай шул.* Б. Хәсән; 2) *ҡар.* **ҡулалмаш. Ҡул араһына инеү** эшкә ярап, ярҙамлашыр йәшкә етеү. *Ҡул араһына инде минең ҡустым Кәбир ҙә, уның менән икәүләп утын быҫабыҙ бергә.* А. Игебаев. **Ҡул арты ауыр** берәй кешегә нимәлер биргәндән һуң уңышһыҙлыҡҡа осрағанда әйтелә. *Күршемдең ҡул арты ауыр булды, уға ҡаҙ биргәндән һуң үҙемдең ҡаҙым уңмай.* **Ҡул арты еңел** кемдер башлаған эштең дауамы ыңғай барғанда, аҙағы уңышлы бөткәндә әйтелә. *Вәлим менән Халиҡ ҡарттар-*

*ҙың ҡул арты еңел булды: төнгө сәғәт икеләргә бөтә колхоздан егерме биш мең һум ярҙам аҡсаһы йыйылды.* С. Агиш. **Ҡул аҫтында** 1) яҡын эргәлә. *Кирбес һуғыу өсөн бөтә нәмә ҡул аҫтында, балсыҡ, ком әҙләп, ситкә йөрөй торғаны юҡ;* 2) кемдеңдер ҡарамағында. *[Котлояр] төндә лә эш таба. .. Уның ҡул аҫтында бер генә минутка ла тынғылыҡ юҡ.* Д. Юлтый. *Үҙ ҡул аҫтына золомлоҡ ҡылған йорт уңмаҫ булыр.* «Батыршаның хаты». **Ҡул барыу** нимәлер эшләргә күңел тартыу. *Шундай файҙалары булған атты ҡулың барып нисек һуғаһың!* М. Ғафури. **Ҡул биләү** *ҡар.* **ҡул ҡаушырыу. Ҡул бысратыу** яманға ҡағылып, яманатлы булыу. *[Бригадир — Шәүәлигә:] Ҡуркма, мин һиңә ҡул бысратмам, ни япраҡ кеүек калтырайһың?* Б. Бикбай. **Ҡулға алыу** 1) әҙәп-тәртипкә буйһондороу, тәртипкә килтереү; тыйыу. *Үҙеңде ҡулға алыу.* ■ *Шәйехебеҙ беҙҙе ҡулға ала, тиҙәр, беҙҙе ул тура юлға һала, тиҙәр* (Бәйеттән); 2) яулап алыу, хужа булыу. *Октябрҙә большевиктар власты ҡулға алды.* Һ. Дәүләтшина; 3) тотҡон итеү. *Кулактарҙың ошағы буйынса волоста эшләгәндәрҙе һәм активистарҙы ҡулға ала башлайҙар.* И. Ниғмәтуллин. **Ҡулға инеү** *ҡар.* **ҡулға төшөү** 1. **Ҡулға ла йоҡмау** *ҡар.* **йоғоу. Ҡулға ҡабыу** 1) килеп эләгеү, тотолоу. *[Сурагол:] Төш, мәлгүн, мин һине әҙләй инем. Инде ҡулға ҡаптыңмы?* Т. Хәйбуллин; 2) *ҡар.* **ҡулға төшөү** 2. *Ул жандармдар ҡулына ҡапты.* **Ҡулға төшөү** 1) милек хәленә килеү. *Ҡулға төшкән аҡса. Ҡулға төшкән мал;* 2) кемдеңдер ихтыярына, власына эләгеү. *Дошман ҡулына төшөү.* ■ *Юлды шартлатыусы ике бандит ҡулына төштө үткер чекистың.* Ғ. Сәләм. **Ҡулдан килеү** нимәнелер эшләй, булдыра алыу. *Ҡулдан килгән ярҙам.* **Ҡулдан китеү** ҡарамаҡтан, милеклектән сығыу. *Шарлы урманкай ҡулдан китмәҫ ине, барлыҡ башҡорт бергә ҡушылһаҡ* (Халыҡ йырынан). **Ҡулдан ыскыныу** 1) үҙен иркен тотоу, буйһонмау, тыңламау. *Азаматтың ағаһы һуңғы ваҡытта бөтөнләй ҡулдан ыскынды, урамдан ҡайтып инмәй.* Ә. Бикчәнтәев; 2) ҡарамаҡтан, милек хәленән сығыу. *Ниндәй сабынлыҡтар ҡулдан ыскынды, бесән сабыр урын ҡалманы.* **Ҡулдан эш төшөү** эше кәмеү, бөтөү. *Улы ҙурайғас, карттың ҡулынан эш төштө.* **Ҡулды алыу** оронмаҫ, теймәҫ булыу. **Ҡулды бәйләү** *ҡар.* **ҡулды тотоу. Ҡулды ҡыҫкартыу** баш-баштаҡлыҡты, һуғышыу, тәртип боҙоуҙы һ. б. тыйыу, бөтөрөү. *Күп бәйләнһәң, ҡулыңды ҡыҫкартырбыҙ.* **Ҡулды тотоу** нимәлер ҡамасаулау, тотҡарлыҡ итеү. *Запас частарҙың юҡлығы ҡулды тота.* **Ҡул еле** *ҡар.* **ел** [1]. **Ҡул етеү** *ҡар.* **ҡул тейеү. Ҡул көсө** 1) кем тарафынандыр һалынған физик көс. *Ерҙе һөрөп иген сәсеүгә хәҙер ҡул көсө түгелмәй;* 2) кем тарафынандыр башҡарылған хеҙмәт.— *Минең ҡул көсөмдән файҙаланып мал йыйҙы.* Б. Хәсән. **Ҡул күтәреү** 1) йыйылыштағы тәкдимгә ҡараш белдереү; 2) кемгәлер килтереп һуғыу. **Ҡул ҡалыу** нимәлер кәмеү (ғәҙәттә, эштән). *Буш ултырғанса, анау ҡапҡаны нығытып ҡуйығыҙ, ҡулығыҙ ҡалмаҫ.* **Ҡул ҡаушырыу** бер ни эшләмәү. *Ҡул ҡаушырып ултырыу.* ■ *Ситтән ҡарап, ҡул ҡаушырып торһам, кем күтәрер минең өлөштө*

Х. Кәрим. **Ҡул ҡуйыу** 1) ҡултамға итеп, фамилияңды яҙыу. *Бойороҡҡа ҡул ҡуйыу. Ғаризаға ҡул ҡуйыу.* ■ *Штаб начальнигы полковник Голенев полк командирҙарын Шайморатов ҡул ҡуйған 86-сы һанлы яңы приказ менән таныштырҙы.* Ә. Ихсан; 2) дөрөҫләү, хуплау, йөпләү. *Кеше һүҙенә ҡул ҡуйыу.* **Ҡул ҡысыу** ниндәйҙер боҙоҡлоҡ эшләргә ҡыҙыҡһып тороу; ҡырсыныу. *Ҡул ҡысып тороу. Һуғышырға ҡул ҡысыу. Был эште эшләргә һине кем һораған? Ҡулың ҡысый инеме ни?* **Ҡул осо** 1) ҡулдың ҡушҡарҙан алып, бармаҡ яҡ осо; 2) ынтылып алырлыҡ яҡын ер. *Үтәголовтар гранаттарын барлап, эргәләренә, ҡул осона һалып ҡуйҙылар.* Ж. Кейекбаев; 3) ҡулланырға әҙер торған хәл. *Мылтыҡты ҡул осона ғына тотоп, эскә инәйем тигәндә, өңдән айыу сығып килгәнен күрҙем. Уны-быны уйлап тормай, атып ебәрҙем.* М. Сәғитов. **Ҡул осонда ғына йөрөтөү** *шул уҡ* **күтәреп алып йөрөү (***ҡар.* **күтәреү). Ҡул сабыу** ҡотлап, усты уҫҡа һуғыу. *Бөтә халыҡ аяҡҡа баҫты, ҡул саба башланы.* Ш. Шәһәр. **Ҡул суғы** *ҡар.* **ҡул осо** 1. **Ҡул тамыры** *шул уҡ* **барлау тамыры (***ҡар.* **тамыр** 3). **Ҡул тейеү** нимәлер эшләү өсөн мөмкинлек тыуыу; форсат булыу.— *Кисә генә ике машина утын килтерткәйнем. Кистән өйөп ҡуйырға ҡул теймәне.* Ф. Иҫәнғолов. **Ҡул тығыу** 1) үҙләштерергә ынтылыу, үҙләштереү. *Ғәбит ағай .. колхоз милкенә ҡул тыкмай торған кеше ине.* К. Мәргән; 2) үҙенсә эшләргә тырышыу. *Кеше эшенә ҡул тыкма.* **Ҡул һалыу** 1) биләү, үҙләштереү маҡсаты менән ынтылыу. *Синфи дошман .. дәүләт милкәтенә ҡул һала.* Б. Ишемғол; 2) үҙен-үҙе үлтереү. *Килен көнләшеүҙән генә үҙенә ҡул һалды.* З. Биишева. **Ҡул һелтәү** иғтибарһыҙ, вайымһыҙ мөнәсәбәт белдереү. *Ҡул һелтәп ҡарау. Ҡул һелтәп ҡуйыу.* **Ҡул һуғышыу** алыш-биреш ваҡытында икәү-ара хаҡ ҡуйып килешеү. *Алыусылары ла, һатыусылары ла шау килеп һөйләшә, ҡул һуғыша, алдай, алдана.* Ғ. Дәүләтшин. **Ҡул һуҙыу** 1) һуғырға ынтылыу. *[Сәлим — Кәримгә:] Ҡул һуҙаһы булһаң, апара ҡорһағыңды бүҫер ҙә төшөрөрмөн.* И. Ғиззәтуллин; 2) үҙләштерергә, баҫып алырға ынтылыу. *Дәүләт милкенә ҡул һуҙыу.* **Ҡул һуҡҡыс** уйын исеме (берәү артын әйләнеп, усын ҡуйып тора, күмәк кешенең береһе шул уҫҡа һуға; кем һуҡҡанын белһә, урын алмашалар). **Ҡулы еңел** *ҡар.* **ҡул арты еңел. Ҡулы кәкре** кеше нәмәһен үҙләштерергә тырышҡан кеше тураһында әйтелә. **Ҡулы ҡаты** *ҡар.* **ҡаты ҡуллы. Ҡулыңдан ҡыуан** кешенең ярҙамына рәхмәт белдергәндә, яҡшы теләк итеп әйтелә.— *Һай, рәхмәт, ҡулыңдан ҡыуан. Изгелекле бала икәнһең.* Ә. Мирзаһитов. **Ҡулы ҡыҫҡа** кемдеңдер ниҙер ҡылырға булдыра алмағанын белдереү өсөн әйтелә. *[Һалдат:] Ҡулың ҡыҫҡа, бай! Һинән ҡыуылған донъяға тыумаған.* Я. Хамматов. **Ҡулы оҙон (***йәки* **һоҡ)** кеше нәмәһенә тейеүсән; уғры. **Ҡул эше** *ҡар.* **эш** 2. **Ҡул яғыу** ҡул тейҙереү, һуғыу. *[Нәзирә:] Баланы урамға сығарыр хәл юҡ. Тағы бер генә ҡул яҡһын — бригадир улы тип тормам.* Я. Вәлиев. **Ҡул ялғау** берҙәм, күмәкләшеп эшләү. *Ауыр эшкә күмәк ҡулды ялғап, биш йыллыкты шулай үтәбеҙ!* Х. Ғәбитов. **Ҡул ялғашыу** бер-береңә ярҙамлашыу; берҙәм

булыу. *Ҡул ялғашып, яңы тормош улар төҙәләр.* М. Абдуллин. **Мул ҡуллы** йомарт. *[Мулла:] Бик ҡаты һыйлап ташланың да баһа .. Мул ҡуллы икәнһең.* З. Биишева. **Оҫта ҡуллы** эшкә булдыҡлы, һөнәрле. **Тере ҡул булыу** (*йәки* **итеү**) эш башҡарыр сараһыҙ булыу йәки итеү. *[Әбей:] Йәмкәмде һындырып тере ҡул иттең. Самауырға ҡуҙ һала алмай аптырайым.* ■ *Бер хисапсы .. өлгөрә торғайны. Әптерәй киткәс, колхоз тере ҡул булды.* Ә. Вахитов. **Уң ҡул** *шул уҡ* **уң ҡанат** (*ҡар.* **ҡанат** [1]). *Яҡшы ярҙамсы тураһында, гәҙәттә, минең «уң ҡулым», тип һөйләйҙәр. Беҙҙең партия ойошмаһының уң ҡулы — стена газетаһы ул.* Р. Солтангәрәев. **Урта ҡул** урта кимәлдәге, урта сифатлы. *Урта ҡул хужалыҡ.* ■ *Мин — Ауыл хужалығы министрлығының урта ҡул хеҙмәткәре.* Ф. Иҫәнғолов. **Эш ҡулы** эшләр кеше, эшсе. **Ярҙам ҡулы** күрһәтелгән ярҙам. **Ярҙам ҡулы һуҙыу** иң кәрәкле саҡта ярҙам күрһәтеү. *Сәлмән ағай донъяның әсеһен-сөсөһөн татыған кеше. Былай иптәшлек яғынан бик яҡшы, .. мохтаж саҡта ярҙам ҡулы һуҙырға әҙер торған бер эшсе.* Т. Йәнәби.

● *Аҡсалының ҡулы уйнар, аҡсаһыҙҙың күҙе уйнар.* Әйтем. *Буйына ҡарама, ҡулына ҡара, буй эшләмәй, ҡул эшләй.* Әйтем. *Ир ҡулынан ҡош туймаҫ.* Мәҡәл. *Ике ҡулың ни эшләһә, ике иңең шуны күтәрер.* Әйтем. *Күҙ — ҡурҡаҡ, ҡул — батыр.* Әйтем. *Ҡул һелтәй, балта саба.* Әйтем. *Ҡуйыныңдағы — юлдағы, ҡуныстағы — ҡулдағы.* Әйтем. *Ҡулың пак булһа, йөҙөң аҡ булыр.* Әйтем. *Ҡул ҡулды, ҡул битте йыуа.* Мәҡәл. *Ҡулы һыуыҡтың йөрәге ҡыҙыу.* Әйтем. *Сибәрҙең — йөҙө, оҫтаның ҡулы уртаҡ.* Әйтем. *Һауалағы торнаға ышанып, ҡулыңдағы турғайҙы ысҡындырма.* Әйтем.

**ҠУЛ** [2] *и.* Ҡалҡыу ерҙән, тауҙан төшкән һөҙәк ярлы соҡор; үҙәк. *Әхмәҙи ул тауҙар һыртында нисәмә тапҡыр бүрәнә ҡырҡҡаны, һалабаш төшөргәне, яҙ көндәре шул тауҙарҙың уялары, ҡулдары эсенән йыла тартҡаны, унда утын һөйәгәне һәм әрҙәнә ҡырҡҡаны бар.* Ж. Кейекбаев. *Шул ете ер артында ташып ятҡан ете ҡул, шул ете ҡул артында шаулап торған ете урман.* Р. Ниғмәти.

**ҠУЛ** [3] *с.* Яраҡлы, йәтешле; ҡулай. *Ҡул булыу.* ■ *— Һеҙ Килдебай ҡустының күп хеҙмәтен белмәйһегеҙ әле. .. Бик ҡул, бик мәслихәт кеше.* Ғ. Дәүләтшин. *Улар матур, беҙ уртаса, беҙ уларға ҡул түгел* (Халыҡ йырынан). / Килешле, лайыҡлы. *[Хаммат:] Мәҙрәсәлә сереп ятыу һинең улыңа ҡул түгел.* З. Биишева.

**ҠУЛА** [1] *и. иҫк.* Баҡыр менән ҡурғаш иретмәһе; бронза.

**ҠУЛА** [2] *и.* **1.** (*йәки* **ҡула ҡаҙан**). Ҡырҙа аш әҙерләй торған ҡылыслы һауыт. *Ҡула аҫыу.* ■ *Ҡыуыш алдында ут яна, аҫҡаҡҡа элгән ҡулала сәй ҡайнай.* Ж. Кейекбаев. *Майҙандың бер ситендә өй ҙурлыҡ ҡара таш. Икенсе ситендә ялҡынланып янған ут өҫтөндә бик ҙур ҡула ҡаҙан аҫылған.* З. Биишева.

**2.** Һалдаттың юл һауыты; котелок. *Ғәскәр килә. Муйындарына төйөнсәк, мылтыҡ, билдәренә ҡула, тимер көрәк, тағы әллә нимәләр аҫҡандар.* Ғ. Ибраһим-Ҡыпсаҡ.

**ҠУЛАБАШ** *с. диал.* Бешәлкәһеҙ. *Ҡулабаш кеше. Ҡулабаш булыу.*

**ҠУЛАҒАЙ** *и.* Йомош үтәгән өсөн йәшерен хаҡ алған рәсми кеше; ришүәтсе.

**ҠУЛАЙ** *с.* Билдәле бер шартҡа, талапҡа уңай килерлек; яраҡлы, йәтешле. *Ҡулай кеше. Ҡулай эш. Ҡулай булыу. Ҡулай итеү. // Эшкә ҡулай тотоноу. Ҡулай эшләү.* ■ *Уларға [етем балаларға] бында бөтә шарттар тыуҙырылған: йылы, яҡты бүлмәләрҙә йәшәйҙәр, тамаҡтары һыйлы, өҫ-баштары бөтөн, уйнау өсөн ҡулай майҙансыҡтар, мәктәпкә әҙерлек дәрестәре өсөн айырым бүлмәләр бар.* «Башҡортостан ҡыҙы», 1986, № 4. *[Егет:] Әсәй, мин бик ҡулай бер урын таптым, шунда күсеп йәшәйек* (Әкиәттән).

**ҠУЛАЙЛАМА** *и.* Эште еңелләштереү, ипләштереү өсөн яһалған өҫтәмә ҡорамал. *Автоматик ҡулайлама.* ■ *Өлкән инженер .. ағас ҡалдыҡтарын йыйыштырыу өсөн ҡулайлама уйлап тапты.* «Совет Башҡортостаны», 1968, 16 август.

**ҠУЛАЙЛАНЫУ** *ҡ.* **1.** *төш. ҡар.* **ҡулайлау.** *Утын бысыу өсөн ҡулайланған урын.*

**2.** Ниндәйҙер шартҡа йәтешләнеү; яраҡлашыу. *Һин әйтәһең: «Брат, ҡуян бул, тормошоңа ҡарап ҡулайлан».* Р. Ниғмәти.

**ҠУЛАЙЛАТЫУ** *ҡ. йөкм. ҡар.* **ҡулайлау.**

**ҠУЛАЙЛАУ** *ҡ.* **1.** Ниндәйҙер эш, талапҡа яраҡлы, йәтешле итеү. *Йәш һунарсылар .. һуҡҡыларын ҡулайлап, ҡапҡандарын йүнәтеп ошо көндәрҙе көтә.* Ғ. Дәүләтшин.

**2.** Яйға, ипкә килтереү. *[Гаврилов:] Беҙҙең хәлде ҡулайлауығыҙ өсөн һеҙгә совет рәхмәте.* А. Таһиров..

**3.** Уңайлаштырыу, йәтешләү. *Фашист уны [самолётты] атып төшөрөргә ҡулайлап, яңынан борола ине.* Ә. Хәкимов.

**ҠУЛАЙЛАШТЫРЫЛЫУ** *ҡ. төш. ҡар.* **ҡулайлаштырыу.** *Ут алыуға, клуб итеп ҡулайлаштырылған баяр йорто шығырым тулы ине.* Р. Ғабдрахманов.

**ҠУЛАЙЛАШТЫРЫУ** *ҡ.* **1.** Билдәле шартҡа, талапҡа яраҡлы итеү; яраҡлаштырыу. *[Йырҙың] һүҙҙәрен генә йырсылар үҙҙәренсә үҙгәртеп, хан ҡыҙы исеменә ҡулайлаштырған.* Й. Солтанов.

**2.** Яйға килтереү; йүнәтеү. *Окоптарҙы ныҡытырға, ҡулайлаштырырға кәрәштек.* Д. Юлтый.

**ҠУЛАЙЛАШЫУ** *ҡ.* **1.** *урт. ҡар.* **ҡулайлау.**

**2.** Ниндәйҙер шартҡа йәтешләнеү; яраҡлашыу. *Көн тәртибенә ҡулайлашыу.* ■ *Был кеше донъяны бик белеп көтә, заманға оҫта ҡулайлаша.* Б. Бикбай. *Бал ҡортоноң сағыуы күп кешегә файҙалы. Ул организмдың, нервы системаһының тәбиғәт шарттарына ҡулайлашыуын көсәйтә.* «Совет Башҡортостаны», 1986, 10 июнь.

**ҠУЛАЙЛЫ** *с.* Билдәле бер шартҡа, талапҡа уңай килерлек; яраҡлы, яйлы, ҡулай. *Ҡулайлы кеше. Ҡулайлы нәмә.* ■ *Ул [Хәкимйән] иртәнге ҡараңғыла траншеяларға килеп, ҡулайлы урын әҙерләп ҡуя.* М. Хәйҙәров. *Мин яуап бирҙем ҡыҙыма ҡулайлы һүҙҙәр табып.* Р. Ниғмәти.

**ҠУЛАЙҺЫҘ** *с.* Билдәле бер шартҡа, талапҡа килешһеҙ; яйһыҙ, ипһеҙ. *Ҡулайһыҙ балта. Ҡулайһыҙ булыу. // Ҡулайһыҙ тотоноу.*

**ҠУЛАЙЫМЛАУ** *ҡ. һөйл.* Алдан уйлап сама-

лау. *Эште эшләр алдан ҡулайымлап алған яҡшы.*

**ҠУЛАЛМАШ** *и.* Үҙ-ара ярҙамлашып, алмаш-тилмәш эшләнгән эш. *Ҡулалмашҡа сығыу.* // *Ҡулалмаш эшләү.* ■ *[Ғатаулла — Нәкиәгә:] Бергәләшеп урырбыҙ ураҡты, ҡулалмашҡа йөрөрбөҙ.* Й. Солтанов. *Быйыл да ҡыр эштәре ҡулалмаш алып барыла.* Б. Бикбай.

● *Ҡулалмашта ҡул талмаҫ.* Мәҡәл. *Ҡулалмаш эш юғалмаҫ.* Әйтем.

**ҠУЛАЛМАШЛАУ** *ҡ.* Ҡулалмаш эшләү. *Игендә ҡулалмашлап булһа ла йыйыштырып алырбыҙ ҙа ул.* Һ. Дәүләтшина.

**ҠУЛАН: ҡулан ҡабырға** иң аҫтағы ҡыҫҡа ҡабырға.

**ҠУЛАС** *и. диал.* Ҡуллыҡ. *Ҡымыҙҙы ҡуласҡа ҡойоу.*

**ҠУЛАСА** [*рус.* колесо] *и.* **1.** Һыу ярҙамында әйләнә торған тәгәрмәс. *Тирмән ҡуласаһы.* ■ *Буш тирмәндең ҡуласаһы иренеп кенә, һалмаҡ ҡына әйләнә.* Х. Ғиләжев.

**2.** Төрлө машинала тигеҙ хәрәкәтте тәьмин иткән ауыр, һәлмәк тәгәрмәс.

**3.** *диал.* Тәгәрмәс.

● *Донъя ҡуласа — әйләндереп килтереп бер баҫа.* Әйтем.

**ҠУЛАТҠА** [*рус.* колодка] *и. иҫк.* Уҫал малдың аяғына һала торған ағас ҡоршау. *Ҡулатҡа һуғыу. Ҡулатҡа һуғылған мал.*

**ҠУЛАУ** *с. диал.* Алғы аяҡтан аҡһаған (атҡа ҡарата). *Ҡулау ат.*

**ҠУЛАУЫҠ** *и.* Бәләкәй ҡул [2]. *Ер өҫтөн ашалыу-емерелеүҙән һаҡлау өсөн дала ерҙәрҙә йырғанаҡ һәм ҡулауыҡ битләүҙәренә ағас ултыртыла.*

**ҠУЛАША** *и.* **1.** Яңы ҡайнатҡан шыйыҡ ҡоротто һоҫоп һарҡытыу өсөн яһалған ҡабыҡ ялғаш. *Ҡоротто ҡулашаға һоҫоп һарҡыталар ҙа, шунда баҫалар.* / Ҙур ағас һауыт.

**2.** Мәйетте зыяратҡа күтәреп алып бара торған ҡабыҡ.

**ҠУЛАШҠА** *и.* Аттың аяғы аяҡҡа бәрелмәһен өсөн бәкәленә ураған бәй.

**ҠУЛ-АЯҠ** *и. йыйн. ҡар.* **аяҡ-ҡул.**

**ҠУЛБАУ** *и.* Мәрйен, сулпылар тағып яһалған беләҙек. *Ҡулымдағы ҡулбауымды өҙәмен дә теҙәмен* (Халыҡ йырынан).

**ҠУЛБАШ** *и.* Ҡулдың яурынға тоташҡан урыны; иңбаш. *Ҡулбаш быуыны. Ҡулбаш һөйәге. Ҡулбашҡа һалыу.* ■ *Ҡулбашыма йүгән аҫып, атҡа китә инем ямғырҙа.* Ғ. Хәйри. *Һәр беренең үйын асыу талай, ҡорал, скатҡа иҙә ҡулбашын, килә һалмаҡ баҫып, тиргә батып, Вадим — дуҫым, Билал — яҡташым.* Х. Кәрим. / Өҫ кейеменең шул урындағы өлөшө. *Ҡулдәктең ҡулбашы бысранған.*

**ҠУЛҒА-ҠУЛ: ҡулға-ҡул тотошоу** 1) етәкләшеү. *Хәлимә менән Сираж ҡулға-ҡул тотошоп .. урамға сыҡты.* Ш. Шәһәр; 2) *күсм.* берҙәмләшеү, бер-беренә ярҙам итешеү, бергәләшеү. *Ҡулға-ҡул тотошоп эшләү.* ■ *Татар-башҡорт эшселәре .. рус эшселәре менән ҡулға-ҡул тотошоп, синыфлыҡ мәсьәләһен алға ҡуйҙы.* З. Шәрҡи.

**ҠУЛДАН-ҠУЛҒА** *р.* Бер кешенән икенсе кешегә; кешенән-кешегә. *Ҡулдан-ҡулға йөрөү. Ҡулдан-ҡулға күсеү. Ҡулдан-ҡулға таралыу.* ■ *Ҡамыр батырҙы ҡулдан-ҡулға йөрөтөп, һауаға күтәргәндәр* (Әкиәттән).

**ҠУЛДАУ** *и. диал.* Ҡуллыҡ. *Ҡымыҙҙы ҡулдауға ҡойоу.*

**ҠУЛДАШ** *и.* Ярҙам итер, таяныр кеше; ярҙамсы. *Батыр булып тыуғанһың, атаңа ҡулдаш булғанһың.* «Урал батыр».

**ҠУЛДЫҠАЙ** *и.* Ҡолаҡлы ағас күнәк.

**ҠУЛЙЫУҒЫС** *и.* Бит-ҡул йыуа торған аҫмалы ҡомған. *Емеш ҡулйыуғыс янында һалҡын һыу менән бик оҙаҡ битен йыуып торҙо.* З. Биишева.

**ҠУЛҠА** [1] *и.* **1.** Үпкәнән йөрәккә барған йыуан ҡан тамыры.

**2.** Йөрәк ауыҙының шул тамыр урынлашҡан ере.

**ҠУЛҠА** [2] *и. диал.* Ҡулҡы. *Ҡалҡыуыраҡ урындарҙы үләндәр ҡаплаған. Айырым ҡулҡалар һәм ҡыуаҡтар рәүешендә унда тал, ерек, ҡайын, саған, йүкә ағастары ла үҫкән.* Д. Бураҡаев.

**ҠУЛ-ҠАМЫТЛЫҠ: ҡул-ҡамытлыҡ булыу** *һөйл.* ҡул араһына инеү, ярҙамсы булыу. *[Мәғфүрә:] Башлы-күҙле итһәк, үҙегеҙгә бер ҡул-ҡамытлыҡ булырмы тип, ағаһы менән дә уйлағайныҡ әле.* Һ. Дәүләтшина. **Ҡул-ҡамытлыҡ итеү** ярҙам итеү, ярҙамлашыу. *[Гәндәлиптең улдары] урман ҡырҡып, һал ағыҙа, кейек аулай. Иң кесеһе лә ағаларына ҡул-ҡамытлыҡ итә.* Т. Килмөхәмәтов.

**ҠУЛҠЫ** *и.* Ҡалҡыулыҡ биттәрендә, ҡул буйҙарында үҫкән бәләкәй ағаслыҡ; бүләк. *Ҡулҡыға күгелйем төҫ ингән. Ҡайындар елгә баштарын сайҡап үҙ-ара һөйләшә.* Ә. Ихсан.

● *Ҡулҡыға ингән ҡотолмаҫ, урманға ингән тотолмаҫ.* Әйтем.

**ҠУЛЛАМА** *и.* Эре һалма өҫтөнә тураған ит һалып, тоҙлоҡ ҡойоп әҙерләгән аш; бишбармаҡ. *Ҡуллама бешереү.* ■ *Башҡорттоң ҡурҙағын, ҡулламаһын ашаһаң, телеңде йоторһоң. Йәйләүҙә үҫкән малдың һимеҙ ите, йомарлаҡ майҙары эскә түгел, елеккә һеңә.* Ш. Шәһәр.

**ҠУЛЛАНМА** *и.* **1.** Йүнәлеш биргән фекер. *Ҡулланма итеп алыу.*

**2.** Эшкә өйрәткән әсбап. *Ҡулланма яҙыу. Фольклор йыйыу ҡулланмаһы.*

**ҠУЛЛАНЫЛЫУ** *ҡ. төш. ҡар.* **ҡулланыу.**

**ҠУЛЛАНЫУ** *ҡ.* **1.** Кәрәккә тотоноу; файҙаланыу. *Ашлама ҡулланыу.* ■ *Һуңғы йылдарҙа республиканың колхоз һәм совхоздарында электр энергияһын ҡулланыу байтаҡ артты.* Ә. Гәрәев.

**2.** Эш башҡарышында, эштә файҙаланыу. *Ҡорал ҡулланыу. Яңы һүҙ ҡулланыу.* ■ *Уҡытыу эшендә төрлө метод ҡулланырға мөмкин.* М. Тажи.

◆ **Ҡулланыу ҡиммәте** *ҡар.* **ҡиммәт.**

**ҠУЛЛАП: ике ҡуллап** ике ҡул менән. *Ике ҡуллап ҡосаҡлау. Ике ҡуллап ыуыу.* **Ҡуш ҡуллап** 1) ҡуш ҡул менән. *Ҡуш ҡуллап күрешеү;* 2) *күсм.* ихлас рәүештә. *Ҡуш ҡуллап риза булыу.*

**ҠУЛЛЫҠ** *и.* Йылҡы малының алғы аяҡ тиреһенән яһалған тар ауыҙлы ҡымыҙ һауыты; ҡулсаҡ. *Ҡуллыҡҡа ҡымыҙ ҡойоу.*

**ҠУЛСА**[1] [*рус.* кольцо] *и.* **1.** Түңәрәкләп ике осо тоташтырылған йомоҡ нәмә; дүңгәләк. *Ағас ҡулса. Тимер ҡулса. Поршень ҡулсаһы. Ҡулсанан үткәреү.* ■ *[Фриц] ни эшләгәнен үҙе лә аңламаҫтан, гранатаның ҡулсаһын тартып ала.* Ғ. Ибраһимов. *Барып еткәс, ат бәйләнем бағанаға ҡаҡҡан ҡулсаға* (Халыҡ йырынан).

**2.** *кар.* **ҡамау**[2]. *Ҡулсала тороп ҡалыу. Ҡулсаға алыу.*

**ҠУЛСА**[2] *и. диал.* Ҡулсаҡ.

**ҠУЛСАҠ** *и.* Йылҡының алғы аяҡ тиреһенән тегелгән тар ауыҙлы ҡымыҙ һауыты; ҡуллыҡ. *Ҡулсаҡтағы ҡымыҙ.*

**ҠУЛСАЛАТЫУ** *к. йөкм. кар.* **ҡулсалау** 1, 2.

**ҠУЛСАЛАУ** *к.* **1.** Ҡулсалы итеү, ҡулса ҡуйыу. *Ҡош ҡулсалау.*

**2.** Ҡулса рәүешенә килтереү; дүңгәләкләү. *Ҡулсалап бөгөү.*

**3.** *күсм. кар.* **ҡамау**[1]. *Ҡулсалап алыу.*

**ҠУЛСЫР** *с.* **1.** Теләһә нәмәгә тейеп, ҡыйратып боҙоп барған; ҡулы тик тормаған. *Ҡулсыр бала.* ■ *Ҡайһы бер ҡулсырҙар ҡурғандың эргәһен, төбәһен ҡаҙып, ҡирбестәрен сығарып бөткән.* «Башҡортостан ҡыҙы», 1969, № 9. / Ҡулы тик тормай, һуғырға әҙер торған.

**2.** Кеше нәмәһенә тейгән, урларға әҙер торған; бур. *Хисамый йәштән үк ҡулсырыраҡ кеше ине. Ул ситтә ат урлашып та йөрөгән.* Б. Бикбай.

**ҠУЛСЫРЛАНЫУ** *к.* Теләһә нәмәгә тейеп барыу, тик тормау.

**ҠУЛТАМҒА** *и.* Кешенең фамилияһын билдәләгән үҙ яҙыуы. *Ҡултамға ҡуйыу.* ■ *Договорға ҡултамға һалыр ваҡыт етте. Шунан һуң ул ябай ғына яҙыу хәленән юридик көскә эйә булған бер документҡа әйләнә.* К. Мәргән. *Ҡыйралмаһын өсөн төҙөк донъя, тыйырға тип үлем атомын өндәмәгә ҡуйған һәр ҡултамға анты ине донъя халҡының.* Я. Ҡолмой.

**ҠУЛТЫҠ** *и.* **1.** Ҡул менән яурын тоташҡан урындың аҫҡы бөгөл эсе; ҡул төбө. *Ҡултыҡ аҫты. Ҡултыҡ төбө. Ҡултыҡҡа ҡыҫтырыу. Ҡултыҡтан күтәреү.* ■ *Бер кеше беҙҙе ҡултыҡтарҙан тотоп, урынға ултыртты.* Д. Юлтый. **Ҡултыҡ таяғы** аяҡһыҙ йәки аҡһаҡ кеше ҡултыҡ аҫтына ҡуйып, таянып йөрөй торған таяҡ. *Майор Дауытовты таныманым, уны һуғыш арыу таушаған: ҡултыҡ таяҡ, биттә бураҙналар, сәсенә ҡырау төшә башлаған.* Б. Бикбай. / Өҫ кейеменең ҡул урынға тап килгән ере. *Ҡултығын тегеү. Ҡултығын һүтеү.* / Ҡул аҫтының һыйҙырышы менән билдәләнгән үлсәү самаһы. *Бер ҡултыҡ бесән.*

**2.** *күсм.* Ике яҡтан ҡамалған тар арауыҡ. *Мейес ҡултығы.* ■ *Таҡыр юл .. беҙҙе тау ҡултыҡтарына һыйынып ултырған ауылдарға алып килә.* К. Мәргән. *Таштар ҡултығында паровоздың аҡ төтөнө ҡалды ишелеп.* Ғ. Сәләм.

**3.** *күсм.* Һыуҙың ҡоро ергә инеп торған өлөшө. *Диңгеҙ ҡултығы. Йылға ҡултығы.* ■ *Бураншa кәмәләрҙе ерҙән ышыҡ ҡултыҡҡа ҡыуған.* З. Биишева.

◆ **Ел ҡултыҡ** *һөйл.* буш маҡтансыҡ. **Ҡыуыш ҡултыҡ** *һөйл.* уҫал, яһил ҡәйнәгә әйтелә.

● *Ике ҡарбуз бер ҡултыҡ аҫтына һыймай.* Мәҡәл.

**ҠУЛТЫҠЛАНЫУ** *к.* Ҡултыҡ (2, 3 мәғ.) яһау, ҡултыҡлы булыу. *Әллә ҡайһы урындарҙан борғоланып, ҡултыҡланып, йырғалаҡланып килеп сыҡҡан Таштуғай йылғаһы..* Ғ. Дәүләтшин.

**ҠУЛТЫҠЛАУ** *к.* **1.** Ҡултыҡтан эләктереп тотоу. *Ҡултыҡлап алыу. Ҡултыҡлап килеү.* ■ *Фатима ҡултыҡлап килгән Ҡадирҙың беләген үҙенең һул ҡабырғаһына нығыраҡ ҡыҫты.* Б. Бикбай. *Гөлбикә был әбейҙе ҡултыҡлаған да, иплән кенә мунсаға алып барған* (Әкиәттән).

**2.** Ҡултыҡ аҫтына алыу; ҡултыҡҡа ҡыҫтырыу. *Шәһиҙә әбей .. бер таба сөсө икмәк ҡултыҡлап килеп инде.* Һ. Дәүләтшина.

**ҠУЛТЫҠЛАШЫУ** *к. урт. кар.* **ҡултыҡлау** 1. *Ҡултыҡлашып йөрөү. Ҡултыҡлашып китеү.* ■ *Заһиҙа менән Шәрәф ҡултыҡлашып алған. Мин Санияға ҡағылырға батырсылыҡ итмәнем.* Н. Мусин.

**ҠУЛТЫҠСА** *и. һөйл.* **1.** Нимәнеңдер эргәһенә ҡуйылған буй терәк; яндауыр. *Баҫҡыс ҡултыҡсаһы. Баҫма ҡултыҡсаһы.* ■ *Ул [Ислам] көс-хәл менән яраланған аяғы тетрәй башлағанын тойоп, күтәрмә ҡултыҡсаһына тотондо.* З. Ғәлимов.

**2.** *кар.* **ҡултыҡ** 2. *Алда ҡуйы шыршылыҡ, ҡултыҡса булып уйылып ингән асыҡ урын күренә.* Р. Мөхәмәтйәнов.

**ҠУЛУРТАҠ** *с.* Бергә, уртаҡ башҡарылған, ҡулалмаш; дөйөм. *[Йыһан — Сәхибәгә:] Беҙ бергә, шуның өсөн эштәр ҙә ҡулуртаҡ булырға тейеш.* Ғ. Хәйри.

**ҠУЛЪЯҘМА** *и.* Ташҡа баҫылмаған, матбуғатта сыҡмаған яҙма. // *Ҡулъяҙма әҙәбиәт. Ҡулъяҙма әҫәр.*

**ҠУЛЪЯҪЫУ** *и. диал. кар.* **ая**[1]. *.. йөк өҫтөн астылар. Йөктөң өҫтөндә бер генә ҡулъяҫыу он, ике санаға ла штыкһыҙ мылтыҡтар теҙеп һалынған.* А. Таһиров.

**ҠУЛЪЯУЛЫҠ** *и.* Бит, танау һөртөү өсөн йөрөтөлгән кеҫә яулығы. *Сигеүле ҡулъяулыҡ.* ■ *Залдағы кешеләр ҡулъяулыҡтары менән биттәрен һөртә-һөртә саф һауаға сыға башланы.* Ә. Вәли.

**ҠУМ** *и.* Эйәр ҡапталына аҫтан ҡуша тегелгән күн тышлы кейеҙ. *Суҡлы ҡум.* ■ *Болғар күндән матурлап башына йүгән кейелгән, ҡумы, айылы — барыһы бергә ҡушып тегелгән.* «Аҡбуҙат».

**ҠУМАЛТА** *и. диал.* Ҡуҙ. *Атаҡайымдың балтаһы ята-ята ғына тут булды. Атаҡайымдың биргән ере ҡумалтанан ҡыҙыу ут булды* (Сеңләүҙән).

**ҠУМАР** [*рус.* камора] *и. диал.* Мунса һымаҡ бәләкәй генә өй. *Таҙ тағы үҙенең ҡумарына ҡайтып ятты, ти* (Әкиәттән).

**ҠУМП** *окш.* Яңғырауыҡлы ҡалын оҙон тауышты белдергән һүҙ. *Мин сәғәтте ҡулғә ырғыттым. Ул ҡумп итеп һыуға сумды.* Д. Юлтый.

**ҠУМПЫЛДАТЫУ** *к.* Ҡумп-ҡумп иттереү; ҡумп-ҡумп килтереү. *Ҡымыҙҙы ыҫҡа һалып ҡумпылдатып бешәһең.*

**ҠУМПЫЛДАУ** *к.* Ҡумп-ҡумп иткән тауыш сығарыу.

**ҠУМТА** *и.* **1.** Ҡалай, ҡатырға һ. б. яһалған бәләкәй һауыт. *Дарыу ҡумтаһы. Орден ҡумтаһы. Ҡапҡаслы ҡумта. Скрипка ҡумтаһы. Ҡумталы кәнфит.* ■ *[Алтынбикә] ҡулындағы ҡатырға ҡумтаны асты. Унан күҙен йомған етен сәсле курсаҡ килеп сыҡты.* Ф. Исәнғолов.

**2.** *диал.* Стенаға ҡағылған һауыт-һаба кәштәһе. *Сынаяҡты ҡумтаға ҡуйыу.*

♦ **Мейе ҡумтаһы** *анат.* баштың мейе ятҡан эске ҡыуышлығы.

**ҠУМШЫНЫУ** *к.* Тик торған ерҙән ҡуҙғалыу, күтәрелеп сығыу. *[Бәҙергол:] — Әҫем, Златоуст, башҡа завод кешеләре лә шул батшаны яҡлай икән. Завод халҡы юҡтан ҡумшынмаҫ.* Ғ. Хөсәйенов.

**ҠУМШЫРЫҠ** *и.* **1.** Яр төбөндәге тәрән һыу аҫты соҡоро.

**2.** *диал.* Йылыу, ҡаран.

**ҠУМШЫРЫҠЛАНЫУ** *к.* **1.** Ҡумшырыҡлыға әйләнеү, соҡорло булыу. *Йылғаның бөгөлөндә һыу төбө ҡумшырыҡланып киткән.*

**2.** *диал.* Йылыулау. *Йылға һаман туңып бөтмәй, ҡумшырыҡланып ята.*

**ҠУМШЫРЫҠЛАУ** *к.* Ҡумшырыҡлыға әйләндереү, соҡорло итеү. *Яҙғы ташҡын яр төптәрен ҡумшырыҡлап бөткән.*

**ҠУМШЫУ** *к. диал.* Ҡупшыу.

**ҠУМЫҘ** *и.* **1.** Бер яҡ башы түңәрәкләп бөгөлгән тимер йәки еҙгә йоҡа ғына тел беркетеп эшләнгән, ауыҙға ҡуйып сиртеп уйнай торған бәләкәй генә музыка ҡоралы. *Ағас ҡумыҙ. Тимер ҡумыҙ. Ҡумыҙ теле. Ҡумыҙ уйнау.* ■ *Ҡыҙҙар бер яҡ ситкә өйөлөшөп, ҡумыҙ тартып бейеҙҙәр ине.* Ж. Кейекбаев. *Тел тейҙерер урын да юҡ ҡымыҙға, әбейҙәрҙең эше еткәс ҡумыҙға.* М. Кәрим.

**2.** *иҫк.* Сиртеп уйнай торған өс ҡыллы музыка ҡоралы; думбыра. *Думбырам минең уйнайҙыр, ҡыл ҡумыҙым һорнайҙыр.* «Заятүләк менән Һыуһылыу».

**ҠУМЫҠ** *и.* Дағстанда йәшәгән халыҡтарҙың береһе һәм шул халыҡтың бер кешеһе (төрки телдәрҙең береһендә һөйләшә). *Ҡумыҡ халҡы. Ҡумыҡ ҡатыны. Ҡумыҡ теле.*

**ҠУМЫҠСА** *р.* Ҡумыҡ телендә. *Ҡумыҡса уҡыу. Ҡумыҡса һөйләшеү.*

**ҠУМЫРТАЙ** *с. диал.* Бәләкәс кенә (өйгә ҡарата). *Таҙ атын ебәрҙе лә, ҡумыртай ғына өйгә инеп ятты, ти* (Әкиәттән).

**ҠУМЫРЫҠ** [1] *и.* **1.** Яр йәки тамыр-томор төбөнә өңөләп ингән һыу аҫты ҡыуышлығы. *Малайҙар йылға буйына таралышты, яҫы таш, ҡумырыҡ аҫтына ҡулдарын тығып, балыҡ эҙләргә тотондо.* Я. Хамматов. / Ер аҫты ҡыуышлығы. *Өс-дүрт километр тәрәнлектән .. нефтле, газлы ҡумырыҡтарҙы табырға кәрәк. Был бик еңел эш түгел.* Ш. Янбаев.

**2.** Ауған ағастың ҡутарылып ятҡан төбө-тамыры. *Ел ҡолатҡан имән ҡумырығы аҫтында — рота КП-һы.* С. Кулибай.

**ҠУМЫРЫҠ** [2] *и.* Бер башҡорт ырыуының исеме.

**ҠУМЫРЫҠЛАНДЫРЫУ** *к. ҡар.* **ҡумырыҡлау.**

**ҠУМЫРЫҠЛАНЫУ** *к.* Ҡумырыҡлыға әйләнеү, ҡумырыҡлы булыу. *Ҡумырыҡланған ер.*

**ҠУМЫРЫҠЛАУ** *к.* Ҡумырыҡлыға әйләндереү, ҡумырыҡлы итеү. *Ярҙы ҡумырыҡлау.*

**ҠУМЫРЫУ** *к.* **1.** Аҫтан өңөү. *Ярҙы ҡумырыу.*

**2.** Төбө-тамырын аҡтарыу. *Ел ағастарҙы ҡумырып ташлаған.*

**ҠУНА: ҡуна таҡтаһы** *диал.* Берәй нәмә өсөн тәғәйенләнгән шыма йөҙлө яҫы таҡта; туҡмас таҡтаһы. *Ҡамырҙы ҡуна таҡтаһында әүәләнем.*

**ҠУНАҠ** *и.* **1.** Хөрмәт күрһәтеп һыйлар өсөн саҡырылған мәжлес. *Ҡунаҡ атҡарыу. Ҡунаҡ йыйыу. Ҡунаҡҡа барыу. Ҡунаҡҡа килеү. Ҡунаҡҡа саҡырыу.* ■ *Плендан ҡайтҡас, Әхмәҙиҙе ун биш көн буйы ҡунаҡтан-ҡунаҡҡа йөрөттөләр.* Ж. Кейекбаев. *Дуҫым саҡырҙы ҡунаҡҡа, тауыҡ бирҙе бүләккә* (Халыҡ йырынан).

**2.** Ошо мәжлескә саҡырылған йәки килгән хөрмәтле кеше. *Ҡунаҡ килгән.* ■ *Ҡунаҡ алдына ҡуялар һыйҙарҙың иң тәмлеһен.* М. Кәрим. **Ҡунаҡ өйө** ҡәҙерлегә тотолған айырым өй йәки бүлмә. *Ҡара-ҡаршы ҙур итеп һалынған яҡшы ғына ике өй тора. Урам яғындағы матуры — ҡунаҡ өйө, эске яҡтағыһы — аш өйө.* М. Ғафури. **Хоҙай ҡунағы** *этн.* саҡырылмай килеп ингән кеше (йола буйынса иң ҡәҙерле ҡунаҡ). *[Егет:] Ир бала булһаң, хоҙай ҡунағының тоҡомон һорама.* «Ҡара юрға». / Саҡырған илгә дуҫлыҡ күрһәтеү, танышыу йәки башҡа маҡсат менән ҡыҫҡа ғына ваҡытҡа килгән шәхес. *Монголиянан килгән ҡунаҡтар.* ■ *Беҙ ҡунаҡ булып килгәнбеҙ Ағиҙел аҡҡан илдән; украинецтар һыйлайҙар тәмле вареник менән.* Р. Ниғмәти. *Польшала .. боҙло юлда тәү тапҡыр мотогонщиктарҙың халыҡ-ара ярышы булды. СССР-ҙан килгән ҡунаҡтар еңеп сыҡты.* «Совет Башҡортостаны», 1965, 9 март. **Ҡунаҡ аяғы** килгән кешегә ултыртылырға тейеш һый. *Ҡымыҙлы өйгә килгән кеше, ҡунаҡ аяғымды бир, тип һорап эсергә лә хаҡлы булған.* М. Ғөбәйҙуллин.

**3.** *күсм. һөйл.* Күрем.

□ **Ҡунаҡ булыу** һый-хөрмәт күреү. **Ҡунаҡ итеү** һый-хөрмәт күрһәтеү. *Ҡала халҡы Аҡъял батырҙы ете көн, ете төн ҡунаҡ иткән* (Әкиәттән).

♦ **Ҡунаҡ йорто** ситтән килгән кеше ҡуна торған махсус йорт; ҡунаҡхана. *Колхоз быйыл яҙ ғына ҡунаҡ йорто ла асып ебәргән.* Д. Исламов. **Ҡунаҡ күреү** кеше ҡунағы эргәһенә саҡырылып, ҡаршы саҡырырға бурыс алыу. *Килер, ҡунаҡ күрер күршеләр, .. бергә-бергә булыр бар хөрмәт.* С. Кулибай. **Ҡунаҡ күрһәтеү** үҙ ҡунағың эргәһенә кеше саҡырып, ҡаршы саҡырырға бурыслы итеү.

● *Көҙ килгән ҡунаҡҡа — ат ҡаҙыһы, яҙ килгән ҡунаҡҡа — ҡарта ярыһы.* Әйтем. *Ҡунаҡ аҙ ултырыр, күп һынар.* Әйтем. *Ҡунаҡтың аты ла, эте лә ҡунаҡ.* Әйтем. *Ҡунаҡ ишегеңде асһа, һин йөҙөңдө ас.* Әйтем. *Ҡунаҡ килһә — ит бешә, ит бешмәһә — бит бешә.* Әйтем. *Ҡунаҡтың сыбыртҡыһы йүкә, йүкә булһа ла үтә.* Әйтем. *Ҡунаҡ тәүҙә өйҙө йәмләй, унан ашты тәмләй.* Әйтем. *Ҡунаҡ хужаның ишәге.* Әйтем. *Өйгә ингәнсә ҡунаҡ ояла, ингәс, хужа ояла.* Әйтем.

**ҠУНАҠ-КИЛЕМ** *и. йыйн.* Килгән-киткән кеше. *[Ҡатыны — иренә:] Ҡунаҡ-килем булырын белеп тораһың, һыйҙы ҡайғыртмайһың.* Й. Солтанов.

**ҠУНАҠЛАТЫУ** [1] *ҡ.* Ҡунаҡ итеп тотоу. *Ҡунаҡлатып яҡҡырыу.*

**ҠУНАҠЛАТЫУ** [2] *ҡ.* **1.** Төнәргә мендереү, ҡундырыу. *Ҡошто ағас башына ҡунаҡлатыу. Тауыҡты төнәккә ҡунаҡлатыу.*

**2.** *күсм.* Юғарынан урын биреү. *Түр башына ҡунаҡлатыу.*

**ҠУНАҠЛАУ** [1] *ҡ.* Һый-хөрмәт күреү, ҡунаҡ булыу. *Ҡунаҡлап ятыу. Ҡунаҡлап ҡайтып барам.*

**ҠУНАҠЛАУ** [2] *ҡ.* **1.** Төнәргә менеп ултырыу. *Ҡунаҡлар өсөн тауыҡтарға арҡыры ҡыуал ҡуйылған, йомортҡа һалыр өсөн йомшаҡ оя әҙерләнгән* (Әкиәттән). / *күсм.* Төн йоҡлау; ҡуныу. *Тәҙрәләре саҡ-саҡ яҡты бирә, күмелеп бөткән ҡышҡы буранға. Ҡуй-ҡуҙылары ла һинең менән бергә тора, бергә ҡунаҡлай.* Т. Йәнәби.

**2.** *күсм.* Юғарыға менеп ултырыу. *Түр башына менеп ҡунаҡлау.* ■ *Мин йылығараҡ, мейес эргәһендәге һәндерәгә менеп ҡунаҡланым.* Д. Исламов.

**ҠУНАҠЛАШЫУ** [1] *ҡ.* Бер-береңде ҡунаҡҡа саҡырыу, ҡунаҡҡа йөрөшөү; ҡунаҡ булышыу. *Бесән алды. Ауыл халҡының буш сағы. Хәлле-рәк кешеләр ҡунаҡлаша.* Д. Юлтый.

**ҠУНАҠЛАШЫУ** [2] *ҡ. урт. ҡар.* **ҡунаҡлау** [2] 1. *Яр буйында, ҡоштар кеүек, ҡунаҡлашып ултырыуҙан да ҙур бәхет буламы ни!* Ә. Бикчәнтәев.

**ҠУНАҠСА** *и.* Тауыҡ төнәй торған таяҡ; төнәк. *Бер көндө кис менән теге төлкө тағы ла шул ҡуян тиреһен ябынып, тауыҡтар ҡунаҡсаһына килә.* Ҡ. Даян.

**ҠУНАҠСЫЛ** *с.* Ҡунаҡ ҡабул итергә әүәҫ, ҡунаҡ һыйларға ихлас. *Ҡунаҡсыл кеше. Ҡунаҡсыл халыҡ. Ҡунаҡсыллыҡ күрһәтеү.* ■ *Ул [хужа] бик күңелле, бик ҡунаҡсыл кеше булып сыҡты. Юл саңын ҡаҡҡылап, тегеләй-былай иткеләгәнсе, өҫтәлен дә әҙерләп бөттө, самауырын да килтереп ултыртты.* Р. Ғабдрахманов.

**ҠУНАҠСЫЛАУ** *ҡ.* Өйҙән-өйгә йөрөп ҡунаҡ булыу. *Ҡунаҡсылап йөрөү.*

**ҠУНАҠСЫЛЛЫҠ** *и.* Ҡунаҡсыл булыу сифаты. *Ҡунаҡсыллыҡ, дуҫҡа яҡты сырай ингән, тиһең, беҙҙең гәҙәткә. Ниңә, башҡорт ҡунаҡ һыйлағанда ҡарап торамы ни сәғәткә?!* Н. Нәжми.

**ҠУНАҠ-ТӨШӨМ** *и. йыйн.* Килгән-киткән ҡунаҡ. *Ҡунаҡ-төшөм ваҡыты.* ■ *[Әклимә:] Ҡунаҡ-төшөм булһа тип, һаҡлап тотҡан бер йәшник шешәле һыра бар.* Н. Иҙелбай.

**ҠУНАҠХАНА** *и.* Килгән-киткән кеше төшә торған махсус йорт; ҡунаҡ йорто. *Редакция мине ҡаланың бер ҡунаҡханаһына урынлаштырҙы.* Д. Бураҡаев.

**ҠУНАЛА** *и. диал.* Төнәк.

**ҠУНАЛҠА** *и.* **1.** Ял итер, ҡуныр өсөн булған туҡталыш. *Дүртәүләп ап-арыу ер киткәс, ҡараңғы төшкән. Былар ҡуналҡа яһамаҡсы булған* (Әкиәттән).

**2.** Туҡтап ял итә, ҡуна торған урын. *Егет ары китә, тағы бер ҡуналҡаға барып етә* (Әкиәттән). **Ҡуналҡа йорто** *шул уҡ* **ҡунаҡ йорто** (*ҡар.* **ҡунаҡ**).

**3.** *диал.* Төнәк. *Тауыҡтар ҡуналҡаларына ҡунаҡлаған.*

**ҠУНАЛҠАЛАУ** *ҡ.* Ял итеү, төн ҡуныу өсөн туҡтау. *Тирмә ҡороп ҡуналҡалар өсөн сәхрәләй күрке бар был тирәнең.* Ғ. Ибраһимов.

**ҠУНАРҠА** *и. диал. ҡар.* **ҡуналҡа** 1, 2. *Улым, юлға сыҡҡас, беренсе ҡунарҡала йоҡлама, уны үткәс йоҡларһың* (Әкиәттән).

**ҠУНАСА** *и. диал.* Төнәк. *Нәкиә килеү менән кетәккә, ҡунаса аҫтарын таҙартып сығарҙы.* «Совет Башҡортостаны», 1965, 23 май.

**ҠУНАУ** *ҡ. диал.* Төләү.

**ҠУНДЫРЫУ** [1] *ҡ.* Ҡунырға ҡалдырыу. *Ҡунаҡты ҡундырыу. Ҡундырып сығарыу.*

**ҠУНДЫРЫУ** [2] *ҡ.* **1.** Бейек урынға мендереү; ҡунаҡлатыу. *Ағасҡа ҡош ҡундырыу.*

**2.** Өҫтән ҡаплатыу; ултыртыу. *Туҙан ҡундырыу.*

◆ **Күс ҡундырыу** ситтән килгән ҡорт күсен һарытыу.

**ҠУНДЫРЫУ** [3] *ҡ.* Тос нәмә менән ныҡ итеп һуғыу; тондороу. *Башына ҡундырыу. Таяҡ менән ҡундырыу.* ■ *Көнсөллөктән уның күршеһе ҡармаҡ һабын һуғып һындырҙы. Үс алыуҙан, уныһы быныһының танауына берҙе ҡундырҙы.* Ғ. Амантай.

**ҠУНЫС** *и.* Аяҡ кейеменең бәкәл тирәһенән юғарғы, ҡул кейеменең беләҙек тәңгәлендәге өлөшө. *Быйма ҡунысы. Бейәләй ҡунысы. Ойоҡ ҡунысы. Ситек ҡунысы. Сарыҡ ҡунысы.* ■ *[Имай] гамбр итегенең ҡайтарма ҡуныстарын ялтыратып, һәлмәк баҫып ишектән килеп инә.* Һ. Дәүләтшина. **Ҡара ҡуныс** яңы күндән тегелгән ҡуныс.

◆ **Ҡуныс ойоҡ** балтырға кейә торған башһыҙ ойоҡ; гетр.

● *Ҡуныстағы — ҡулдағы, ҡуйындағы — юлдағы.* Әйтем.

**ҠУНЫСБАУ** *и.* Оҙон ҡунысты балтыр өҫтөнән бәйләү өсөн төрлө төҫтәге йөн ептән ишеп яһалған суҡлы бау; ҡысмау. *Ҡунысбау ишеү.* ■ *[Ҡотлогилде] аяғына тула ойоҡ кейеп, бөгәренән суҡлы ҡунысбау менән бәйләгән.* Ж. Кейекбаев.

**ҠУНЫСЛАНЫУ** *ҡ. төш. ҡар.* **ҡунымлау.** *Крәҫтиәндең аяғында эт тиреһе менән ҡунысланған иҫке быйма.* С. Кулибай.

**ҠУНЫСЛАУ** *ҡ.* Ҡунызлы итеү, ҡуныс ҡуйыу.

**ҠУНЫСЛЫ** *с.* Ҡунызлап эшләнгән. *Ҡунызлы аяҡ кейеме. Бейек күтәрмәле туфлиҙәрҙе сисеп, ҡунызлы һары ботинкаларын кейеп алғас, [арыған] Емешкә тағы йән инде.* З. Биишева. **Ҡуныслы калуш** ситe бейек калуш.

**ҠУНЫУ** [1] *ҡ.* Ҡайҙалыр туҡтап, йоҡлап төн үткәреү; йоҡлап сығыу. *Төн ҡуныу. Юлда ҡуныу. Ҡуна ҡайтыу. Ҡуна ҡалыу. Ҡунырға туҡтау. Ҡуныр йөрөү. Ҡуныр китеү.* ■ *Бара торған ҡала, ат менән еңелсә юртып йөрөгәндә, көнөн барып етерлек булһа ла, йөк тейәп йәки мал ҡыуып барған кеше юлда ҡунмай булдыра алмай.* Т. Йәнәби. *Көн кис булғанға юлсылар бәләкәй генә бер өйҙә туҡтап ҡундылар, ти* (Әки-

эттән). *Йылтыр ғына йылтыр уттар яна, юлаусылар ҡунған ер, буғай* (Халыҡ йырынан).

◆ **Ат ҡуныу** төнгөлөккә ҡырға ат көтөргә сығыу. *Ауыл малайҙары ат ҡуна барғайнылар. Улар төнө буйы .. атты алмашлап ҡарарға, алмашлап йоҡларға тейештәр ине лә бит, арыттырған шул. Уянып китһәләр, аттары юҡ.* «Совет Башҡортостаны», 1968, 13 февраль. **Ҡуна ятыу** төнгөлөккә ҡайтмай ҡалыу. *Ҡуна ятып эшләү. Ҡуна ятып бесән сабыу.* ■ *Тирәклелә бик ҙур баҫыу булырға тейеш: яҙғы сәсеүгә бригада аҙна буйы шунда ҡуна ятып эшләгәйне.* Й. Солтанов.

● *Илгә барған — ике ҡунған.* Әйтем. *Илгә сыҡҡан — иллене ҡунған.* Әйтем. *Ҡусһә — ҡуна белмәгән, ҡунһа — ҡусә белмәгән йорт кәҙерен белмәҫ.* Мәҡәл. *Ҡусеремде ел белә, ҡуныр ымды ер белә.* Мәҡәл.

**ҠУНЫУ** [2] *ҡ.* **1.** Осоп килеп ултырыу. *Ағасҡа ҡуныу. Ташҡа ҡуныу. Ҡунып һайрау.* ■ *Сәүкәләр электр сыбығына ҡунып ял итә лә, йәнә оса.* «Совет Башҡортостаны», 1969, 5 октябрь. *Һары ғына сәскә ал булмаҫ, бал ҡорттары ҡунып бал алмаҫ* (Халыҡ йырынан).

**2.** *ҡусм.* Аҫҡа табан түбәнәйеү, төшөү. *Ҡояш ҡуна тауға. .. Кис була.* Ғ. Амантай. *Йылғалар төнөн һөйләшә, болот тауҙарға ҡунғас.* М. Кәрим. *Таң, ахыры, тәҙрәләргә зәңгәр яҡтылыҡ ҡуна.* Н. Мусин.

**3.** Төшөп өҫтән ҡаплау; ултырыу. *Бәҫ ҡуна. Ҡар ҡуна. Ҡырау ҡуна. Туҙан ҡуна.* ■ *[Зөһрә] әбейҙең башындағы яулығына һис кер ҡунмаҫ, өҫтөндәге зәңгәр бәрхәт камзулына тап теймәҫ.* Ә. Хәмәтдинова. *Саң да ҡунмаҫ, ерекмәҫ юл батыр сапҡан юл булыр* (Ҡобайырҙан).

**4.** *ҡусм.* Барып тейеү; һуғылыу, һуғыу. *[Ғамилә] иренең түбәһенә йоҙроҡ менән ҡунып-ҡунып ала ине.* Б. Бикбай. *Ул арала атҡандың береһе лампаға ҡуна.* Ш. Бабич.

◆ **Ит ҡуныу** таҙарыу, һимереү. *[Мөхит — Миңлекамалға:] Былай ҙа тәнгә ит ҡунмай, ә һин һаман картуф һыуы менән генә һыйлайһың.* Д. Исламов. **Сал ҡуныу** ағарып, салға әйләнеү (сәс һ. б. ҡарата).

● *Ҡоро ҡулға ҡош ҡунмаҫ.* Әйтем. *Ҡот ҡойҙороу менән ҡот ҡунмаҫ.* Әйтем. *Яңғыҙ ҡайынға ҡош ҡунмаҫ.* Әйтем.

**ҠУНЫШ** *и. ҡар.* **ҡуналҡа** 1, 2. *Төн үткәреү өсөн ҡуныш ҡарап, туҡтарға булдылар.* Ғ. Ибраһимов. *Иҙел-Үҙән араһы мәңге ҡуныш булырмы, был ҡунышта ултырып, мәңге тыныс булырмы?* «Мәргән менән Маянһылыу».

**ҠУҢ:** **ҡуң ит** һөйәгенән айырып алынған сей ит; һөйәкһеҙ, һум ит.

**ҠУҢАЛТАҠ** *р.* **1.** Ялан аяҡ. *Ҡуңалтаҡ кейеү.* ■ *Бәрхеямал әбей ойоғон да кейеп тормай, ҡалушын ҡуңалтаҡ ҡына элеп, урге оска тиклем барып етте.* Ш. Янбаев.

**2.** *с. мәғ. ҡусм.* Буш, файҙаһыҙ, мәғәнәһеҙ. *Ҡуңалтаҡ кеше.* ■ *Октябрь революцияһына хәтле ҡуңалтаҡ тормош кисергән, наҙанлыҡта, ҡараңғылыҡта көн иткән был башҡорттар бөгөн .. культуралы тормошта йәшәйҙәр.* Ғ. Ишбулатов.

**ҠУҢАЛТАЯҠ** *р. диал.* Ҡуңалтаҡ.

**ҠУҢҒЫҘ** *и. ҡар.* **ҡуңыҙ.**

**ҠУҢҠ** *оҡш.* Яңғырауыҡлы ҡалын өҙөк тауышты белдергән һүҙ.

**ҠУҢҠЫЛДАУ** *ҡ.* Ҡуңҡ-ҡуңҡ иткән тауыш сығарыу. *Ҡул буйҙарын яңғыратып ҡуңыҙ ҡуңҡылдай.*

**ҠУҢЫҘ** *и.* Яры ҡанаттарынан тыш ҡаты ҡанаттары ла булған бөжәк. *Саҡ менән суҡ тынған арала мин .. көндөҙ тиҙәк аҫтында ятҡан ҙур ҡыҙыл ҡуңыҙҙың дырылдап осҡанын ишетәм.* Ш. Янбаев. **Алтын ҡуңыҙ** алтын һары төҫтәге ялтырап торған ҡороҡҡос ҡуңыҙ. **Иген ҡуңыҙы** игендең баштарын ҡырҡа торған зарарлы ҡуңыҙ. **Күн ҡуңыҙы** күнде, тирене ашай торған ваҡ ҡуңыҙ. **Ҡабыҡ ҡуңыҙы** ағас ҡабығын йырып йөрөй торған ваҡ ҡара ҡуңыҙ. **Ҡара ҡуңыҙ** иҙән аҫтында, еүеш ерҙә була торған оҙонса ҡара ҡуңыҙ. **Тиреҫ ҡуңыҙы** тиреҫ аҫтында була торған эре ҡыҙыл ҡуңыҙ. **Япраҡ ҡуңыҙы** ағастың япрағын ашай торған ҡуңыҙ.

**ҠУҢЫР** *с.* Ҡыҙғылтыраҡ ҡара; көрәнһыу. *Ҡуңыр күҙ. Ҡуңыр һыйыр.* ■ *Ялпаҡ битле, ҡуңыр йөҙлө бисә .. сәй яһаны ла Әхмәткә һонҙо.* И. Көҫәпҡол. *Ул йоҡламай. .. Асыҡ иңбашына ҡуңыр сәсен һипкән туҙҙырып.* Ғ. Хәйри.

**ҠУҢЫРАЙЫУ** *ҡ.* Ҡуңыр төҫкә инеү. *Руль артында биттәре көнгә янып ҡуңырайған Әксән Ҡусәкәев ағай ине.* «Совет Башҡортостаны», 1968, 26 май.

**ҠУҢЫРЛАНЫУ** *ҡ.* Ҡуңыр төҫкә инеү, ҡуңыр төҫ алыу. *Гөлсәсәктең түңәрәк йөҙө, асыҡ муйыны, терһәгенә тиклем һыҙғанған беләге .. ҡояшта янып ҡуңырланған.* «Ағиҙел», 1965, № 4.

**ҠУҢЫРТ** *с.* Ҡуңырға тартым. *Ҡуңырт йөҙлө. Ҡуңырт күҙле.*

**ҠУҢЫРҺЫУ** *с. ҡар.* **ҡуңырт.**

**ҠУҢЫС** *и. диал.* Ҡуныс.

**ҠУП** *оҡш.* Тышы ҡаты, эсе йомшаҡ нәмәгә һуҡҡанда сыҡҡан тауышты белдергән һүҙ. *Ҡуп итеү. Ҡуп итеп ҡалыу.*

**ҠУПА** *и.* Күл уртаһындағы, һаҙлыҡтағы ҡамышлыҡ. *Ййыҡбай ҙа тигән ай ҡупаның әйләнәһе алты саҡырым; сахраларға сығып, тауға менеп йырлап йөрөй Зәлифә бахырың* (Халыҡ йырынан).

**ҠУПАЙТЫУ** *ҡ.* **1.** Ҡабарынҡы итеп ҡалҡытыу; ҡабартыу. *Ҡупайтып ҡуйыу.* ■ *Перронда баштарына папаха бүрке кеүек иттереп, ҡупайтып яулыҡ бәйләгән ҡатындар йөрөйҙәр ине.* Ә. Бикчәнтәев.

**2.** *ҡусм.* Эреләндереү, маһайтыу. *Маҡтап ҡупайтыу.* ■ *Бынауындай байҙың йорт өҫтөнә килеүе Этколдо ҡупайтып ебәрҙе.* Т. Хәйбуллин.

**ҠУПАЙЫУ** *ҡ.* **1.** Ҡабарынҡы булып ҡалҡыу. *Тәлгәт бишмәтен йүкә менән быуған, арҡаһы ҡупайып тора.*

**2.** *ҡусм.* Әллә кем булып, эреләнеү; маһайыу. *Ҡупайып йөрөү. Ҡупайып ултырыу.*

**ҠУПАЛЙЫУ** *ҡ. диал.* Ҡупҡалйыу.

**ҠУПҠАЛЙЫТЫУ** *ҡ.* **1.** Урынынан ҡуҙғатыу; ҡалҡытыу. *Халыҡты ҡупҡалйытыу.*

**2.** *ҡусм.* Тынысһыҙлатып ҡуҙғатыу; ҡуҙғытыу. *Йөрәкте ҡупҡалйытыу.*

**ҠУПҠАЛЙЫУ** *ҡ.* **1.** Урындан тороп ҡуҙғала башлау; ҡалҡыныу. *Әлегә шым ғына ултырған*

*халыҡ тағы ҡупкалйығандай булды.* Ғ. Дәүләтшин.

**2.** *күсм.* Тынысһыҙланып, ҡуҙғалыу; ҡуҙғыу. *Йөрәк ҡупкалйый.* ■ *[Әлекәй:] Йәмәғәт, тыныс булығыҙ, старшина хәҙрәте менән бай һеҙҙе ҡупкалйымаҫҡа, тыныслыҡ һаҡларға ҡушты.* Ғ. Дәүләтшин.

**ҠУП-ҠУП** *окш.* Ҡабат-ҡабат ҡуп иткән тауышты белдергән һүҙ. *Ҡуп-ҡуп итеү. Ҡуп-ҡуп килеү.*

**ҠУПРАЙТЫУ** *к.* Эреләндереү; маһайтыу, ҡупайтыу. *Ҡупрайтып ултыртыу.*

**ҠУПРАЙЫУ** *к.* Үҙеңде шәпкә һанап, эреләнеү; маһайыу, ҡупайыу. *Ҡупрайып йөрөү. Ҡупрайып ултырыу.* ■ *Хәҙер, ана, Рәис, звено башлығымын, тигән булып, ҡалай ҡупрайып йөрөй.* Н. Мусин.

**ҠУПТАРТЫУ** *к. йөкм. ҡар.* **ҡуптарыу.**

**ҠУПТАРЫЛЫУ** *к.* **1.** *төш. ҡар.* **ҡуптарыу.** *Ҡуптарылған таҡта.*

**2.** Аҫты-өҫкә килеү; емерелеү. *Аҡтарылһын, ҡуптарылһын, донъя бөтһөн айҡалып.* Ш. Бабич.

**ҠУПТАРЫУ** *к.* **1.** Ныҡ береккән, йәбешкән нәмәне айырыу; аҡтарыу. *Иҙән таҡтаһын ҡуптарыу. Итек табанын ҡуптарыу. Өй түбәһен ҡуптарыу.* ■ *Дала дауылы бигерәк көслө була, карт имәндәр тамырын ҡуптара.* Б. Ишемғол.

**2.** *күсм.* Көслө, ярһыу итеп, ҡапыл ҡуҙғатыу; күтәреү. *Буран ҡуптарыу. Дауыл ҡуптарыу.* ■ *Бер ваҡыт ел-дауыл ҡуптарып, дейеү ҡайтып килә, ти* (Әкиәттән). / Ыҙғыш, талаш һ. б. ҡуҙғатыу. *Бәлә ҡуптарыу. Бола ҡуптарыу. Мажара ҡуптарыу. Тауыш ҡуптарыу. Һәләкәт ҡуптарыу. Янъял ҡуптарыу.* ■ *Йәштәр генә бына һөйләшеп хәл итергә мөмкин булған мәсьәләләрҙе ғауғаға ҡуптарып, ҙурайтып ташланылар.* Һ. Дәүләтшина. *Арғы биттә таш ҡутара Сонайым, ике бисә дау ҡуптара, Сонайым* (Халыҡ йырынан). **Донъя ҡуптарыу** *ҡар.* **донъя.** *Донъя ҡуптарып әрләү.* **Зыҡ ҡуптарыу** *ҡар.* **зыҡ. Ҡиәмәт ҡуптарыу** *шул уҡ* **донъя ҡуптарыу** (*ҡар.* **донъя**).

◆ **Эш ҡуптарыу** оло эш ҡуҙғатыу, эш сығарыу.

**ҠУПТАРЫШЫУ** *к. урт. ҡар.* **ҡуптарыу.**

**ҠУПТЫРЫУ** *к.* **1.** Йәбешкән еренән ысҡындырып алыу; айырыу. *Ҡуптырып алыу. Ҡабыҡ ҡуптырыу.* ■ *Урман эсе себен-серәкәйҙәр .. менән тулғанлыҡтан, Хажисолтан йүкә ҡабығын ҡуптырған урынға .. төтөнлөк һалырға ҡушты.* Я. Хамматов.

**2.** Ҡуҙғатып торғоҙоу; ҡалҡытыу. *Ташты ҡуптырыу.*

**3.** *күсм.* Хәрәкәткә килтереү; ҡуҙғатыу. *Ығы-зығы ҡуптырыу.*

**ҠУПШАҠЛАНЫУ** *к. диал.* Ҡупшыу. *[Насар] буяу бер миллиметр ҡалынлығында һалынһа ла һауытты үртәгәндә ҡупшаҡлана.* «Совет Башҡортостаны», 1970, 4 ғинуар.

**ҠУПШАУ** *к. диал.* Ҡупшыу. *Йүкәнең ҡайыҙы ҡупшап тора.*

**ҠУПШЫ** *с.* **1.** Күрер күҙгә матур, йәмле, килешле. *Ҡупшы кәүҙә. Ҡупшы булыу. // Ҡупшы атлау. Ҡупшы йөрөү. Ҡупшы кейенеү.* ■ *Бөтәһенең кейемдәре йәшел бер иштән. Ҡупшы кейем өҫтөренә илла килешкән.* Ғ. Дәүләтов. *Минең өҫтә ҡупшы итеп тегелгән шинель .. ине.* Д. Юлтый.

**2.** Матур, фырт йөрөргә яратҡан. *Ҡупшы кеше. // Ҡупшы йәшәү.* ■ *Танцы һайын иң уртала, иң түрҙә .. һоро костюм, һары шиблет Ильяс ҡупшы һәр ерҙә.* Х. Кәрим.

● *Ҡупшы өшөмәҫ, ҡалтырар.* Мәҡәл. *Ҡупшының ҡулы етмәҫ, наҙлының эше бөтмәҫ.* Әйтем.

**ҠУПШЫБИКӘ** *и. һөйл.* Кейенеп-яһанып йөрөргә яратыусан ҡатын-ҡыҙ.

**ҠУПШЫҠАЙ**[1] *и. һөйл.* Кейенеп-яһанып, фырт йөрөргә яратыусан кеше.

**ҠУПШЫҠАЙ**[2] *и.* Көйөлдөләр ғаиләһенә ҡараған ҡыҙыллы-һарылы сыбар ала турғай; ҡупшы турғай. *Ҡарабаш турғай һәм ҡупшыҡай дегәнәк орлоғон төрлөсә яралар. Ҡарабаш дегәнәктәрҙең ҡарышлауыҡтарын сүпләп ашай ҙа орлоғон ҡалдыра. Ҡупшыҡай орлоҡто ашай, унан һуң ҡабыҡтар ғына ҡала.* Я. Вәлиев.

**ҠУПШЫЛАНЫУ** *к.* Матур итеп кейенеп-яһаныу. *Ҡупшыланып йөрөү.* ■ *Беҙҙең контролёр Хәйруллин да бик ҡупшыланып килгән, түш кеҫәһенә янып торған ҡыҙыл яулыҡ ҡыҫтырған.* С. Агиш. / Матурланыу, йәмләнеү. *Ер — еткән ҡыҙ, шундай ҡупшыланған, бигерәк матур килде быйыл яҙ!* Б. Викбай.

**ҠУПШЫЛАТЫУ** *к.* Ҡупшы иттереү, матурлатыу. *Шаян елдәр йәш муйылдың ҡупшылата ап-аҡ шәлен.* Р. Аҙнағолов.

**ҠУПШЫЛАУ** *к.* Ҡупшы итеү, матурлау. *Өҫ-башты ҡупшылау.* ■ *Табын башы — башмеханик Ҡотлобай, мыйыҡтарын бороп ҡуйған ҡупшылап.* М. Тажи.

**ҠУПШЫЛЫҠ** *и.* Күңелгә рәхәтлек, йәнгә ләззәт биргән сифат, матурлыҡ. *Йәш ваҡытта ҡупшылыҡты кем яратмай, барыбыҙ ҙа яратабыҙ.* М. Тажи.

**ҠУПШЫТЫУ** *к. йөкм. ҡар.* **ҡупшыу.** *Ҡупшырға булышлыҡ итеү. Стенаның балсығын ҡупшытыу.*

**ҠУПШЫУ** *к.* Йәбешкән ерҙән айырылып ҡалҡыу. *Стенаға йәбештерелгән ҡағыҙ ҡупшып тора.*

**ҠУПЫ**[1] *и. диал.* Соҡоп эшләнгән һауыт; туҫтаҡ. *Әсәй шунда уҡ бер ҡулыма ат ҡылынан үрелгән иҫке бауырлыҡ ҡиҫәге, икенсе ҡулыма әсе ҡатыҡ һалынған ҡупы тоттора.* Ғ. Байбурин.

● *Ҡупың ямаҡ булһа ла, эсендә ашы булһын.* Әйтем.

**ҠУПЫ**[2] *и. диал.* Кәмә, умарта һ. б. соҡой торған арҡыры балта; бағау.

**ҠУПЫ**[3] *и. диал.* Балыҡ ҡурҡытыу, өшкөтөү ҡоралы; гөмбөр[2]. *Ҡупы менән ҡыуыу.*

**ҠУПЫҠ** *с.* Үҙен шәпкә һанаусан; ҡупым, маҡтансыҡ. *Ҡупыҡ кеше. Ҡупыҡ булыу.*

**ҠУПЫЛДАТЫУ** *к.* Ҡуп-ҡуп иткән тауыш сығарыу, ҡуп-ҡуп иттереү. *Ҡупылдатып һуғыу.* ■ *[Ғимранов менән Иштуған] көлөшөп-ҡыуанышып, арҡаларынан ҡупылдата һөйөшөп күрешеләр.* З. Биишева.

**ҠУПЫЛДАУ** *к.* Ҡуп-ҡуп иткән тауыш сығарыу. *Ағасты балта төйҙәһе менән һуғып ҡараһалар, ҡупылдап тора, ти* (Әкиәттән).

**ҠУПЫМ** *с.* Үҙен бик шәпкә ҡуйыусан; маҡтансыҡ, ҡупыҡ. *Ҡупым кеше. Ҡупым булыу.*

**ҠУПЫН** *и.* Кәмә таҡталарын ҡағып беркетә торған кәкре ағас. *Кәмә ҡупыны. Ҡупын һаҡ.*

**ҠУПЫР** *с. һөйл.* Ҡупым. *Ҡупыр кеше. Ҡупыр булыу.*

**ҠУПЫРАЙЫУ** *ҡ.* Үҙен шәпкә һанап маһайып, эреләнеп йөрөү. *Мәзһәр Хәмзиндең бөтә тормош йомғағы күҙ алдында... Уның бер ваҡытта ла күкрәк һуғып, мин алдынғы эшсе, минән өлгө алығыҙ.., тип, ҡупырайғаны булманы.* Ә. Әхмәтҡужин.

**ҠУПЫРЛЫҠ** *и. һөйл.* Ҡупыр булыу сифаты. *Һаранлыҡ-йомартлыҡ, бер ҡатлылыҡ-әскерлелек, ҡупырлыҡ-баҫалҡылыҡ — былар, Аҡбирҙе ҡарт әйтмешләй, күберәк нәҫелдән килгән сифаттар.* З. Ураҡсин.

**ҠУПЫРЫНЫУ** *ҡ. һөйл.* Үҙен шәпкә һанау; ҡупырайыу, кәпәренеү. *Юҡ-барға ҡупырыныу. Ҡупырынып йөрөү.*

**ҠУР** [1] *и.* **1.** Ҡымыҙ, бал әсеткеһе. *Ҡымыҙ ҡурын ондан һаҡ ҙа ауыр түгел.* М. Ғөбәйҙуллин. *Көбө эргәһенә ҡуйылған ҡатын, бешкәге менән көбө төбөн болғап, ҡурын ҡатыштыра.* Я. Хамматов. / *диал.* Ҡамыр, ҡатыҡ әсеткеһе.

**2.** *күсм.* Башланғыс, нигеҙ булған мал-мөлкәт; мая. // *Ҡур аҡса. Ҡур мал.*

**ҠУР** [2] *и.* Ниндәйҙер эш-хәлдән ҡалған эҙемтә; шауҡым. *Мөбәрәк ҡарт йәш-елкенсәк менән гәпләшергә ярата. Шуның ҡуры менән ике-өс көн буйы ҡартлығын онотоп, дөбөрләтеп йөрөп ҡала.* Р. Ғабдрахманов. *Ҡыйшыҡ уҡ атҡан менән тура китмәҫ, күңелдән яман һүҙҙең ҡуры китмәҫ.* Аҡмулла.

**ҠУР** [3] *и.* Яҙғы буръяҡ йылғаның кире ағымына ҡуйып балыҡ аулай торған оҙон тотҡалы ҙур сүмес ау. *Ҡур ҡуйыу. Ҡур менән балыҡ тотоу.*

**ҠУР** [4] *и. иҫк.* Һалым, яһаҡ. *Ҡур һалыу. Ҡур түләү.*

**ҠУР** [5] *и. иҫк.* Ҡуҙ. *Ҡартайған көнөндә ҡарт бабаңдың ҡурҙай ҡыҙыл күҙен сығарҙың.* «Иҙеүкәй менән Мораҙым».

**ҠУРА** *и.* **1.** Мал-тыуар ояһы; һарай. *Ат ҡураһы. Һыйыр ҡураһы.* ■ *Малдар һинең һымаҡ өй эсендә ҡыуыш ҡороп ята алмайҙар, уларға ҡыйыҡлы йылы ҡура кәрәк.* Т. Йәнәби. *Яландарҙа ҡалмаҫ бер йән заты, ҡураларға ҡайтыр бар аттар.* Д. Юлтый. *Оҙон ҡыш буйы ҡурала торған мал иркенлеккә сығып, күк үләнгә туйып, таҙарышып, һимерешеп китер ваҡыттар етте.* «Совет Башҡортостаны», 1985, 23 май. / *диал.* Ваҡ мал өсөн һарайҙың бер яҡ ситенән ситән менән кәртәләп ҡуйылған урын.

**2.** Ишек алды, ихата. *Сыға ир бала ҡураға, имгәкләп тупһа аша.* М. Кәрим.

◆ **Ерек ҡураһы** *диал.* еркәүек.

**ҠУРАҘ** [*фарс.*] *и.* **1.** *иҫк.* Әтәс. *Әсебеҙ ҡарт бәкәрҙең быуаҙындай, телебеҙ йәһәннәмдең шуаҙындай, ҡотороп һәр кемгә лә тураябыҙ, һимерткән күркә, тауыҡ ҡураҙындай.* Аҡмулла.

**2.** *күсм.* Ирҙәрҙең енси ағзаһы.

● *Ҡаҙ ҡаҙ менән, таҙ таҙ менән, таҙ тауыҡ таҙ ҡураҙ менән.* Әйтем.

**ҠУРАЙ** [1] *и.*, **ҡурай үләне** Сатыр сәскәлеләр ғаиләһенә ҡараған ҡыуыш һабаҡлы эре үлән. *Ҡырлы ҡурай. Таҡыябаш ҡурай. Ҡурай сәскәһе.* ■ *Ҡурай үләне яҙ ҡалҡып, июль айының беренсе яртыһында аҡ сәскә ата.* Ғ. Сөләймәнов. *Ялан ерҙә үҫкән ай бер ҡурай, сәскәләрен елдәр ҡиптергән* (Халыҡ йырынан).

◆ **Айыу ҡурайы** *шул уҡ* **айыу көпшәһе** (*ҡар.* **көпшә 1**). **Ҡурай бот** оҙон нәҙек аяҡлы кешегә ҡарата әйтелә. **Ҡурай еләге** роза сәскәлеләр ғаиләһенә ҡараған сәнскәк һабаҡлы ҡыуаҡ үҫемлек һәм шул үҫемлектең хуш еҫле алһыу емеше; әберсә. *Улар [Сәгиҙәләр] кеше бейеклеге булып үҫкән ҡурай еләге араһына инеп киттеләр.* М. Тажи. **Сүл ҡурайы** әсе ҡыуыш шыма һабаҡлы, таҡыя башлы бейек үлән (уйын ҡоралы яһауға ҡулланыла).

● *Ел өрмәй тороп, ҡурай һелкенмәй.* Мәҡәл.

**ҠУРАЙ** [2] *и.* Башҡорт халҡының ҡурай үләненән йәки башҡа әсе көпшәле нәмәләрҙән тишектәр тишеп яһаған тынлы музыка ҡоралы. *Ағас ҡурай. Еҙ ҡурай. Үлән ҡурай. Ҡурай моңо. Ҡурай тауышы. Ҡурай тартыу.* ■ *Яҙар ҡурайын алып, тишектәрен теле менән еүешләп, еңел генә бер-ике өрөп ебәрҙе. Башты арткараҡ һалып, күкрәкте киреп уйнай башланы.* Б. Ишемғол. *Ҡурай — данлы халҡымдың данлы үткәне лә, гүзәл бөгөнгөһө лә, шатлыҡтарға тулы киләсәге лә.* З. Исмәғилов. *Ҡурай — быуаттан-быуатҡа, атанан — улға, ағанан ҡустыға өйрәтелгән беҙгә иң кәҙерле музыка ҡоралы — комартҡы булып ҡалған.* Ғ. Сөләймәнов. **Сор ҡурай** һыҙғыртып уйнай торған ҡыҫҡа ҡурай; бисәләр ҡурайы, ҡамыш ҡурай, һыбыҙғы. *Таштуғайҡай һинең ҡамышыңдан сор ҡурайҙар яһап тартайым* (Халыҡ йырынан).

◆ **Кемдеңдер ҡурайына бейеү** кеше ыңғайына, кеше һүҙенә ҡарап йөрөү, кемдеңдер күрһәтмәһе, теләге буйынса эшләү. *[Мәрйәм:] Ирҙәр ҡурайына бейей торған заман түгел, беҙ үҙебеҙ колхозда ҙур көс хәҙер.* М. Тажи. *[Баһау] Ваҡытлы хөкүмәттең империалистик политикаһын, уның ҡурайына бейеүсе буржуазияны, милләтселәрҙе, руханиҙарҙы аяуһыҙ фашлай.* Я. Вәлиев.

● *Ҡурай үҫөн тын кәрәк, егет үҫөн һын кәрәк.* Әйтем. *Ҡурай тартһаң, көй була, бурәнә тартһаң, өй була.* Әйтем.

**ҠУРАЙСЫ** *и.* Ҡурай уйнаусы, ҡурай уйнау оҫтаһы. *Ҡурайсылар ансамбле.* ■ *Йырсылар, ҡурайсылар йыйындарҙа тыуған илде, ер-һыуҙы, батырлыҡты, инсафлыҡты маҡтаған йырҙар йырлар булғандар.* Ж. Кейекбаев. *Ҡурайсы Яҡуп ҡарт та бирелеп уйнай. Уның оҙон ҡурайы һауаны тулҡынландыра, ҡурай эсенән моңөрәнеп гөжләгән тауыштары тәнде сымырлата.* Т. Хәйбуллин. *Ҡурайсылар ҡурай тарта алмай, ҡулдарында ҡурай булмаһа* (Халыҡ йырынан).

**ҠУРАҠ** *и.* Ҡурға ҡалдырылған өйөр айғыры.

**ҠУРАНЫС** *с.* **1.** Бәләкәс кенә, ҡаҡса кәүҙәле. *Ҡураныс кеше.* ■ *Өмөгөлсөм бойоғоп, нисектер бәләкәс, ҡураныс булып, тынып ҡалды.* З. Биишева. / Ҡурылып, шөрөшкән; ас.— *Ем алған ваҡытында ямғыр яумаған, бойҙай ҡураныс ҡына булып кибеп ҡалды.* Һ. Дәүләтшина.

**2.** *диал.* Наҡыҫ. *Тауар-маҙарға ҡураныс булып тора.*

**ҠУРАНЫСЛАНЫУ** *ҡ.* Бәләкәйләтеп, ҡаҡ-

саға, ҡураныҫҡа әйләндереү, ҡураныс итеү. *Шик-шөбһәләр уны [Фатихты] юк кына нәмәгә ҡыҙып барыусан итеп, һурылтып, бер аҙыраҡ ҡураныслап уҡ ебәрҙе.* А. Мағазов.

**ҠУРАТ** *и.* Көлтә эҫкерте.

**ҠУРАУ** [1] *к.* **1.** Үтә ныҡ кибеү; короу. *Моңло үләнде ул [Талип] алып ҡайтҡан, үлән кипкән, йәйләп ҡураған; тағы моң сығарып булмаҫмы тип, төрләсәләп өрөп ҡараған. Үлән ҡурай-ҡурай яҡшырғанға атаған, ти, егет ҡурай тип.* Б. Вәлит. *Улар [колхозсылар] ҡурап бөткән бесәнде ямғырға ҡалдырмаҫҡа, бер юлы ҡубәләп ку-йырға булдылар.* «Ағиҙел», 1965, № 12.

**2.** Бик ныҡ кибеп, ҡаҡшау; ҡорғаҡһыу. *Ағас мискә ҡурап, таралып төшкән.*

**ҠУРАУ** [2] *с.* Үтә ныҡ кипкән. *Ҡурау бесән.*

**ҠУРБАШ** *и. диал.* Ҡамыр эсеткеһе; икмәк башы. *Ҡурбаш ҡалдырыу.*

**ҠУРҒАЛАУ** *к.* Әлдән-әле ҡарап, һағалау; һағауыллау. *Ни тиклем ҡурғалап йөрөһәм дә, бынау умартаның ҡусен тотоп булманы.*

**ҠУРҒАЛАУҺЫҘ** *с.* Ҡарауылһыҙ, һаҡлау-һыҙ. *[Юлдыҡай:] Ҡурғалауһыҙ ятҡан тыныс өйҙә кемгә килеп айбар орғанһың?* Х. Ғәбитов.

**ҠУРҒАЛЫУ** *к. төш. ҡар.* **ҡурғау.**

**ҠУРҒАН** *и.* **1.** Тупраҡтан өйөп яһалған хәрби нығытма; ҡәлғә. *Үҙе кәрәк тапҡан урындарҙа Арыҫлан ҡурғандар эшләтте, урҙар ҡаҙҙырҙы.* Ғ. Ибраһимов.

**2.** Бейек итеп өйөлгән боронғо ҡәбер. *Ҡалҡыулыҡта Бәндәбикә ҡурғаны бар. Ул, тирмә өй һымаҡ итеп, кирбестән эшләнгән.* З. Биишева.

**ҠУРҒАНЫУ** *к.* Һөжүмдән һаҡланыу.

**ҠУРҒАУ** *к.* Яуҙан, бәлә-ҡазанан һаҡлау, ҡурсалау. *Ил (де) ҡурғау.* ■ *Провинция воеводаһы Верёвкин, ҡото алынып, ҡәлғә гарнизонына ғына ышанмай, тирә-яҡ волостарҙан дәүләт крәҫтиәндәрен ҡәтғи приказ менән йыйып ҡоралландырырға, ҡурғау эшен нығытырға тотондо.* Ғ. Хөсәйенов. *Октябрҙең емеш баҡсаларын ҡурғап, һаҡта уҙҙы йылдарым.* Б. Вәлит.

♦ **Ҡурғау тотоу** яуға ҡаршы һаҡ тотоу. *Ҡурғау тотмай дошман оранына, кем һуң башын һалып ҡиҫтерһен.* Т. Хәйбуллин.

● *Ҡурҡаҡлыҡ үлемдән ҡурғамай.* Әйтем.

**ҠУРҒАУЛАУ** *к.* Яуҙан, һөжүмдән һаҡлап, ҡурсалау. *Сит яуҙар килеп баҫһа, ил аҙаматтары тупланып, үҙ тереклектәрен ҡурғаулау өсөн ҡаршы сыҡҡандар.* Ғ. Ибраһимов.

**ҠУРҒАУСЫ** *и.* Һәр төрлө бәлә-ҡазанан яҡлаусы; ҡурсалаусы кеше. *Илде ҡурғаусы.*

**ҠУРҒАУСЫЛЫҠ** *и.* Яуҙан, һөжүмдән һаҡланыуға әҙерлек. Ҡурғаусылыҡ сараһы. *Ҡурғаусылыҡ эше.*

**ҠУРҒАУҺЫҘ** *с.* Ҡарауылһыҙ, һаҡлауһыҙ. *[Ынйыҡай:] Тапҡандар икән. Ҡурғауһыҙ өйҙө килеп сабып, таларға.* Х. Ғәбитов.

**ҠУРҒАУЫЛ** *и.* **1.** Яуға, һөжүмгә ҡаршы ҡуйылған һаҡ. *Ҡурғауылда ятыу. Ҡурғауыл тотоу.*

**2.** Яуға, һөжүмгә ҡаршы ҡуйылған һәр төрлө нығытма. *Ҡурғауыл һыҙығы. Ил ҡурғауылын нығытыу.*

**ҠУРҒАУЫЛЛАУ** *к.* Яуға, һөжүмгә ҡаршы тороп һаҡлау. *Ил сиген ҡурғауыллау.*

**ҠУРҒАШ** *и.* **1.** (*йәки* **ҡара ҡурғаш**) Еңел сүкеләп торған, тиҙ ирәүсән, күгелйем төҫлө ауыр металл. *Ҡурғаш табыу.*

**2.** *күсм.* Пуля. *Яһау айыуҙың йөрәгенә тейҙәне. Ҡурғаш йыртҡыстың яурынын ғына һыҙырып үтте.* Я. Хамматов.

**3.** (*йәки* **аҡ ҡурғаш**) Еңел сүкелә торған, көмөш һымаҡ аҡһыл төҫтәге еңел металл.

♦ **Мейеһе** (*йәки* **башы**) **ҡурғаш иретеп ҡойған һымаҡ** башта ныҡ ауырлыҡ тойғанда, баш ныҡ ауыртҡанда әйтелә. *Саҡай Солтанов ни йоҡоло, ни уяу түгел, уфылдап, ҡуҙғала алмай яға бирҙе. Тотош тәне һыҙлай уның, башы ҡурғаш иретеп ҡойған һымаҡ, ауыр, туң.* Б. Бикбай.

**ҠУРҒАШЛАТЫУ** *к. йөкм. ҡар.* **ҡурғашлау.**

**ҠУРҒАШЛАУ** *к.* Ҡурғашлы итеү, ҡурғаш ялатыу. *Ҡалайҙы ҡурғашлау.*

**ҠУРҒЫ** [1] *и.* **1.** Ваҡ ағаслы, еләк-емешле тар текә үҙәк. *Ҡуй инде, Байсураға еткән ер ҡайҙа ул, уның болотка олғашҡан ҡаялары ҡайҙа ул. Уның ҡурғыларындағы кеүек емештәрҙе ҡайҙан өҙөп ҡабаһың.* Һ. Дәүләтшина.

**2.** Ағастары ҡырҡып алынған урын; ҡырҡынды [2]. *Ҡурғы үртәү.*

**ҠУРҒЫ** [2] *и.,* **ҡурғы ҡаҙан** Бойҙай, борсаҡ һәм башҡа шуның һымаҡ нәмә ҡура торған йәйпәк ҡаҙан. *Ҡусәк бейҙең әсәһе ярыҡ ҡурғы ҡаҙанда ҡурмас ҡыҙҙырып ултыра.* «Бабсаҡ менән Ҡусәк».

**ҠУРҒЫЛЫҠ** *и. ҡар.* **ҡурғы** [1] 1. *Ҡурғылыҡта һис бер тынмай сылтыр-сылтыр шишмә йырлай.* С. Ҡудаш.

**ҠУРҒЫУ** *к. ҡар.* **ҡурғау.** *Ай Уралым, таш йортом, башҡортомдоң баш йорто, ете ырыуға ҡор булған, бергә туплап ҡурғыған ..* Р. Шәкүр.

**ҠУРҘАЙ** *и. ҡар.* **ҡоролдай.**

**ҠУРҘАҠ** *и.* Ҡурылған ит. *Бер тирмә янында ике ҡатын ит турай. Улар ҡурҙаҡ ҡурырға әҙерләнә.* Ш. Шәһәр. / Яңы һуйған малдың үҙ майында ҡурған үпкә-бауыры.

**ҠУРҘЫРЫУ** *к. йөкм. ҡар.* **ҡурыу** 1. *Ит ҡурҙырыу. Картуф ҡурҙырыу.*

**ҠУРЖА** *и. диал. ҡар.* **юшҡын** 1. *Самауырға ҡуржа ултырған.*

**ҠУРЖАҠ** *и. диал.* Лүшә. *Ағасҡа ҡуржаҡ ҡунған.*

**ҠУРЖЫМ** *и. диал. ҡар.* **юшҡын** 1.

**ҠУРЙЫН** [1] *и.* Эйәр ҡанъяғаһына артыу өсөн күндән йәки йөн балаҫтан матур итеп биҙәп яһалған ике яҡлы моҡсай; артмаҡ. *Һалдаттар ҡурйындарына шөкәрә урынына патрон тултырып алдылар.* Ә. Ихсан. *Яуабыңды бирәһең яңғыҙ, тине, ҡурйыныңда ҡанса бар аҙыҡ, тине.* Ғ. Соҡорой.

♦ **Ҡурйын тулыу** аҡса, малға булған нәфсе ҡәнәғәтләнеү. *Һинең дә ҡурйыныңтулмаҫтай булды.* **Үҙ ҡурйынына һалыу** 1) үҙенеке итеү, үҙләштереү. *Урал ҡуйынындағы бөтә алтынды үҙ ҡурйынына һалып бөтөр өсөн [Брагин] төрлө-төрлө заводтар ҡорған.* З. Биишева; 2) үҙ бизмәненә үлсәү; үҙе һымаҡ күреү.

● *Арыҡ атҡа ҡурйын да ауыр.* Әйтем.

**ҠУРЙЫН** [2] *и. диал. ҡар.* **ҡур** [1].

**ҠУРЙЫУ** *к.* Үтә ныҡ әсеү; ҡырҡыуланыу, артау. *Ҡурйыған ҡымыҙ. Ҡурйыған буҙа.*

**ҠУРҠАҠ** *с.* Ҡурҡыу тойғоһона тиҙ бирелеү-

сән, ҡурҡыу тойғоһон еңә алмаған, ҡурҡыусан. *Ҡурҡаҡ кеше. Ҡурҡаҡ йән. Ҡурҡаҡ булыу.* ■ *Ҡыйыуҙыр тип уйлап йөрөгәнем ҡурҡаҡ булып сыҡты. Ул бары тик яҙмыш ҡулындағы ҡурсаҡ булып сыҡты.* Р. Сафин. *Ғәскәреңә әмер бирсе, хан, зил-зәмбәр үк килһен хас дошман. Һинең һүҙҙән ғәҙел әмер юҡ, ҡурҡаҡ булһа, ханға кәҙер юҡ.* М. Кәрим.

● *Бирәм тигән бей булмаҫ, ҡурҡаҡ әҙәм ир булмаҫ.* Әйтем. *Күҙ ҡурҡаҡ, ҡул батыр.* Әйтем. *Ҡурҡаҡ егет ҡуй башынан да ҡурҡыр.* Әйтем. *Ҡурҡаҡ ҡурҡһа — сөскөрөр, дошманына көс бирер.* Әйтем. *Ҡурҡаҡ менән юлдаш булма, көйһөҙ менән моңдаш булма.* Әйтем. *Ҡурҡаҡтың йоҙроғо кеҫәһендә.* Әйтем. *Ҡурҡаҡ үҙ күләгәһенән дә ҡурҡа.* Әйтем. *Ҡурҡаҡ эт өрөп ҡурҡыуын баҫыр.* Әйтем. *Ҡурҡҡанға ҡуш, ҡойроғо менән биш.* Әйтем.

**ҠУРҠАҠЛАНЫУ** *ҡ.* Ҡурҡаҡҡа әйләнеү, ҡурҡаҡ булыу.

**ҠУРҠАҠЛЫҠ** *и.* Ҡурҡаҡ булыу сифаты, ҡурҡаҡ булыу хәле. *Ҡурҡаҡлыҡ арҡаһында. Ҡурҡаҡлыҡ тойғоһо.*

**ҠУРҠАҠТАРСА** *р.* Ҡурҡаҡтарға хас. *Үҙеңде ҡурҡаҡтарса тотоу.*

**ҠУРҠА-ӨРКӘ** *р.* Ҙур ҡурҡыу хисе менән; ҡурҡып ҡына. *Мин ҡурҡа-өркә генә ҡабат күҙ һалғанда, тупһа төбөндә бер кем дә юҡ ине.* Д. Исламов.

**ҠУРҠЫЛДАҠ** *и. диал.* Күмәгәй.

**ҠУРҠЫЛДАУ** *ҡ. ҡар.* **ҡорҡолдау.**

**ҠУРҠЫЛЫҠ** *и. диал.* Ҡараҫҡы.

**ҠУРҠЫЛЫУ** *ҡ. эйһ. ф. ҡар.* **ҡурҡыу** [1]. *Юҡҡа ҡурҡылған икән: уҡытыусының тауышы шундай яғымлы, йомшаҡ булып сыҡты.* Б. Бикбай.

**ҠУРҠЫНЫС** *с.* **1.** Күңелгә шом, ҡурҡыу хисе һалған. *Ҡурҡыныс тауыш. Ҡурҡыныс төш. Ҡурҡыныс уй. Ҡурҡыныс хәбәр. Ҡурҡыныс булыу.* ■ *Ә соланда бик ҡурҡыныс хәҙер, ниҙер шығырлаймы үҙендә; унда бишнә менән аҡтарылған иҙән үтә туң ер күренә.* Р. Ниғмәти. / Бәлә-ҡаза, үлем килтергән; хәүефле, хәтәр. *Ҡурҡыныс дошман. Ҡурҡыныс хәл. Ҡурҡыныс эш.* ■ *[Мәрйәм:] Аһ!.. Ниндәй ҡурҡыныс! Һеҙ һуғышҡа бармағыҙ! Үлерһегеҙ.* Д. Юлтый.

**2.** *и. мәғ.* Кешене ауыр кисерештәргә, ҡыйын, хәүефле шартҡа ҡуйған хәл. *Ҡурҡыныс бар. Ҡурҡыныс юҡ. Аслыҡ ҡурҡынысы. Үлем ҡурҡынысы. Ҡурҡыныс һалыу.* ■ *Ҡамыр батыр батша ҡыҙына: «Дейеү ботарланды, ҡурҡыныс бөттө»,— тигән* (Әкиәттән).

**ҠУРҠЫНЫСЛЫ** *с.* Ҡурҡыу хисе тыуҙырған, ҡурҡытырлыҡ. *Ҡурҡыныслы хәбәр. Ҡурҡыныслы хәл. Ҡурҡыныслы әкиәт.* ■ *Ҡырҡ биш дөйәсе сайҙан ҡарап торһа, ҡурҡыныслы бер йыртҡыс пәйҙә булған.* «Бабсаҡ менән Күсәк».

**ҠУРҠЫНЫСҺЫҘ** *с.* Ҡурҡынысы булмаған; хәүеф-хәтәрһеҙ. *Ҡурҡыныcһыҙ эш.* ■ *Төмрөкүл һаҙлығы аша үткән ҡурҡыныcһыҙ урынды ауылда .. ул ғына белә ине.* Ә. Вахитов.

**ҠУРҠЫНЫУ** *ҡ.* Билдәһеҙ нәмәнән ҡурҡып шомланыу, ҡурҡыу хисенә бирелеү. *Төрлө күңелһеҙ хәбәр ишетеп ҡурҡынған халыҡ ни эшләргә белмәне.* Я. Хамматов. *Ә Аҡназар көн-төн тынғы тапмай, ҡалтыранып ятҡан, ҡурҡынып. Ул-был була ҡалһа, тоҫҡармын, тип, баш аҫтында тотҡан мылтығын.* М. Тажи.

**ҠУРҠЫНЫШЫУ** *ҡ. урт. ҡар.* **ҡурҡыныу.** *Оя ташлап, таң яғына осто ҡурҡынышҡан ҡоштар төркөмө.* М. Кәрим.

**ҠУРҠЫТҠЫС** *с.* **1.** Ҡурҡыта торған. *[Шәһиҙә әбей:] Бына, балалар, был ҡағыҙҙарҙың береһе лә шайтан ҡурҡытҡыс доғалыҡ түгел, быларҙың бөтәһе лә ана шул улымдан ҡалған изге яҙыуҙар.* Һ. Дәүләтшина.

**2.** *и. мәғ.* Ҡурҡыта, өркөтә торған нәмә; ҡараҫҡы. *Баҡсаға ҡурҡытҡыс ҡуйыу.*

**ҠУРҠЫТЫЛЫУ** *ҡ. төш. ҡар.* **ҡурҡытыу.** *Ҡурҡытылған кеше.*

**ҠУРҠЫТЫУ** *ҡ.* **1.** Ҡурҡыуға төшөрөү. *[Разия:] Анау Ғәйзулла бабайҙың оло башы менән бала ҡурҡытып йөрөүен әйтер инем инде.* Н. Мусин.

**2.** Хәүеф-хафаға төшөрөү; хафаландырыу. *[Мәгүзә:] Кәнсәләр менән ҡурҡытма һин мине, ҡурҡытма!* Б. Бикбай. *Ҡурҡытмай беҙҙе ҡышҡы һыуыҡ та.* Н. Иҙелбай.

**3.** *эйһ. ф. ҡар.* **ҡурҡыу** [1] 1. *Донъя кемгә ҡала, тигән саҡта, йәшермәйем, бер аҙ ҡурҡыта.* Н. Нәжми.

**ҠУРҠЫУ** [1] *ҡ.* **1.** Йән өсөн шомға төшөү, шөрләү тойғоһо кисереү; шөрләү. *Ҡурҡып китеү.* ■ *Улар шулай зыҡ ҡупҡанда, тәҙрә быялаһына ике тапҡыр сирттеләр. Ҡыҙҙар ҡурҡып, ҡысҡырышып, мейес артына ҡастылар.* Һ. Дәүләтшина. / Ниндәйҙер хәл өсөн шомға, хафаға төшөү; хафаланыу, хәүефләнеү. *Үлемдән ҡурҡыу. Яҙанан ҡурҡыу.* ■ *Аҙым һайын ғәйебең асылғанын көтөп, ҡурҡып йәшәгәнсә, арығансы эшләп, тыныс йоҡлауыңа ни етә.* Б. Бикбай.

**2.** Билдәле бер шартҡа түҙмәү; бирешеп барыу (үсемлектәргә, ҡайһы бер ҡош-ҡортҡа ҡарата). *Еләк сәскәһе ҡырауҙан ҡурҡа. Күркә себеше ямғырҙан ҡурҡа.*

● *Көслөнән ҡурҡма, үсленән ҡурҡ.* Әйтем. *Сиңерткәнән ҡурҡҡан — иген икмәгән.* Әйтем. *Бер ҡурҡҡан эт өс көн өрә.* Әйтем.

**ҠУРҠЫУ** [2] *и.* Шөрләү, хафаланыу тойғоһо. *Ҡурҡыуға төшөү. Ҡурҡыу алыу.* ■ *Сигенеүҙе белмә, ҡурҡыуҙы белмә, дошмандың һис бер еңеүен күрмә.* М. Хәй. *Ут һүнгәнен күргәс, ҡыҙҙы ҡурҡыу алған: тышта ҡараңғы төшөп килә, ә яҡын тирәлә кеше-фәлән юҡ икән* (Әкиәттән).

**ҠУРҠЫШ** *ҡ.* Ҡурҡыу тойғоһо. *Ҡурҡыштан тертләү. Ҡурҡыштан телһеҙ ҡалыу.* ■ *Әхмәҙи ҡурҡышынан илауын ташлай ҙа, йәнен ҡул осона тотоп, ергә ята.* Ж. Кейекбаев.

**ҠУРҠЫШЫУ** *ҡ. урт. ҡар.* **ҡурҡыу** [1] 1. *Мужиктар ҡулдарына һәнәк, салғы, балта тотоп, баярҙың йортон баҫҡан. Ҡатын-балалары ҡурҡышып, сыр-сыу килеп, иҙән аҫтына төшөп ятҡан.* М. Тажи.

**ҠУРЛАНДЫРЫУ** *ҡ.* Ҡур [1] һалып, әсе хәлгә килтереү, әсетеү. *Ҡымыҙҙы ҡурландырып алғанға тиклем сабырлыҡ менән эш итергә кәрәк.* М. Ғөбәйҙуллин.

**ҠУРЛАУ** [1] *ҡ.* Ҡур [1] һалыу, ҡур менән емләү. *Ҡымыҙҙы тәү яһағанда ҡатыҡ менән ҡурлайһың, шунан бешәһең инде бер туҡтауһыҙ.*

**ҠУРЛАУ** [2] *к. диал.* Берәй нәмәгә иғтибар итеп, мөнәсәбәтеңде белдереү; ыжлау. *Әрләгәнгә ҡурлап та бирмәй.*

**ҠУРЛАШЫУ** *к. диал.* Әрләшеү.

**ҠУРЛЫ** *с.* **1.** Мал-мөлкәтле, йыйнаҡлы; бай. *Ҡурлы кеше.*

**2.** Бәрәкәтле, үрсемле. *Ҡурлы мал.*

**ҠУРЛЫҠ** *и. диал. ҡар.* **ҡур** [1]. *Ҡурлыҡ һалыу.*

**ҠУРМА(Ҡ)** *и. диал.* Ҡурҙаҡ. *Ҡурма бешереү.*

**ҠУРМАС** *и.* Бөтәүләй ашар өсөн ҡыҙҙырған бойҙай. *Ҡурмас ҡурыу.* ■ *Иртә менән ике таба ҡурмас ҡурып, аҡ майға болғатып ашанылар.* Һ. Дәүләтшина.

**ҠУРПАС** *и. диал. ҡар.* **үркәс** 1.

**ҠУРПЫ** *и.* Сабылған ергә яңынан үҫкән йомшаҡ үлән йәки йәш иген. *Сабылған ерҙәр хәҙер күпереп үҫкән ҡурпы менән ҡаплана.* Н. Мусин. *Туры бурыл йөрөй ҡурпы утлап, еҙ ҡыңғырау ҡуя сыңғырҙап.* Х. Назаров.

**ҠУРПЫЛАНЫУ** *к.* Ҡурпы менән ҡапланыу.

**ҠУРПЫЛАУ** *к.* Ҡурпы менән ҡапланыу. *Ямғырҙан һуң сабынлыҡ ҡурпылап китте.* / Йәш ағас үҫендеһе менән ҡапланыу; үргенләү. *Уҙған йыл ҡурпылап, шәбәйеп киткән имән, саған ҡыуаҡтары тирәһендә генә, ҡар бураны туҙҙырып, ике төлкө уйнай.* Ә. Хәкимов.

**ҠУРПЫСЫҠ** *и.* Һыуһыл урманда була торған һор сыбар төҫлө, оҙон төҙ суҡышлы, ҡыҫҡа нәҙек аяҡлы күгәрсен ҙурлыҡ ҡош; урман өйрәге. *Ата ҡурпысыҡ. Инә ҡурпысыҡ. Ҡурпысыҡ тауышы.*

**ҠУРПЫУ** *к.* Ҡурпы утлау, ҡурпы ашау. *Март, апрель аҙаҡтарында бөтә сүл йәп-йәшелгә төрөнә. Тауҙарҙа ҡуйҙар ҡурпып йөрөй.* К. Кинйәбулатова.

**ҠУРСАҠ** [1] *и.* **1.** Кеше һынында яһалған балалар уйынсығы. *Баҙамша бабай Тәзкирәһе Оксанаға ҡурсаҡ килтерҙе. Ҡурсағы бик елле: күлдәк кейгән, яулыҡ бәйләгән, ысын ҡурсаҡ.* М. Кәрим. **Ҡурсаҡ уйнау** 1) ҡурсаҡ уйыны уйнау; 2) *күсм.* еңел эш менән шөғөлләнеү. **Ҡурсаҡ уйыны** 1) ҡурсаҡтарҙы һөйләштереп уйнала торған уйын; 2) *күсм.* еңел эш. *[Байрамбикә:] Их, ҡыҙыҡай, тормошҡа сығыу ҡурсаҡ уйыны түгел шул ул.* М. Хәйҙәров. / Махсус театрҙа уйнау өсөн кеше һәм төрлө йәнлек рәүешендә яһалған фигура. *Ҡурсаҡ театры.*

**2.** *күсм.* Кейенеп-яһанып йөрөргә яратҡан еңел тәртипле ҡатын-ҡыҙға ҡарата әйтелә. *Ул [Сания кеүек] ҡурсаҡтан халыҡҡа ни файҙа? Ни аллаға, ни муллаға!* М. Тажи.

**3.** *күсм.* Кеше ыңғайына ғына йөрөгән кеше.— *Һин үҙең дә ҡурсаҡ инең: ебеңде тарттым — теләгәнсә бейеттем. Хәҙер кәрәгең бөттө.* Б. Бикбай.

**ҠУРСАҠ** [2] *и.* Үҫеш осороноң бер мәлендә ашамай, ҡуҙғалмай көпкә төрөнөп ятҡан бөжәк; көплө ҡорт. *Күбәләк ҡурсағы. Ҡурсаҡҡа әйләнеү.*

**ҠУРСАҠЛАНЫУ** *к.* Ҡурсаҡҡа [2] әйләнеү.

**ҠУРСАЛАНЫУ** *к.* **1.** *төш. ҡар.* **ҡурсалау.**

**2.** *ҡайт. ҡар.* **ҡурсалау.** *Бригада йортонда Кәбир елдән ҡурсаланып, хискә сумып ултыра.* Я. Вәлиев.

**ҠУРСАЛАУ** *к.* Хәстәрлек тойғоһо менән тел-тештән, хәүеф-хәтәрҙән кәртәләү; ҡурсыу. *Баланы ҡурсалап үҫтереү. Йәштәрҙе алкоголь тәьҫиренән ҡурсалау.* ■ *Ерен ҡурсалап көрәште ирҙәрҙең аҫылдары.* А. Игебаев. *Башҡорт АССР-ы граждандары сит илдә Совет дәүләтенең яҡлауынан һәм ҡурсалауынан файҙалана.* Башҡорт АССР-ының Конституцияһы, 1984.

**ҠУРСАЛАШЫУ** *к. урт. ҡар.* **ҡурсалау.** *[Таңатар:] Ауыр ваҡыттарҙа ҡурсалашмаһаҡ, дошман беҙҙе берәмләп тырым-тырағай килтерер.* Ә. Вахитов.

**ҠУРСЫУ** *к.* Аяп, хәстәрләп, тел-тештән, хәүеф-хәтәрҙән кәртәләү; һаҡлау, ҡурсалау. *Илде ҡурсыу.*

● *Илен ҡурсыған ил ағаһы булыр.* Мәҡәл.

**ҠУРТМА** *и.* Мәрсен һымаҡтар ғаиләһенә ҡараған буй-буй ҡабырсаҡлы, тупағыраҡ моронло бик эре балыҡ; бикре.

**ҠУРТЫМ** [*рус.* кортом] *и. тар.* **1.** Үҙ-ара килешеп, хаҡ түләп, ниҙелер ваҡытлыса файҙаланыу тәртибе; аренда. *Ҡуртым хаҡы. Ҡуртымға алыу.* ■ *1869 йылда башҡорт ерҙәрен ҡуртымға бирергә һәм һатырға рөхсәт иткән закон сығарыла.* М. Хисмәтов. / *күсм.* Ер һатыу, ер биреүгә арналған йыйын. *Ҡуртымға барыу. Ҡуртымға йыйылыу.*

**2.** Хаҡ түләп, кәрәк-яраҡ нәмәне ваҡытлыса файҙаланырға алыу тәртибе; прокат. *Ҡуртымға кер машинаһы алыу.*

**ҠУРШ** *окш. ҡар.* **ғурш.**

**ҠУРЫҘ** *и.* Йәш йүкә ағасының ҡуптарып, ҡыртышын һыҙырып киптергән ҡабығы. *Ҡурыҙ киптереү. Ҡурыҙ төшөрөү (һуйыу).* ■ *Сәскә атҡан зифа йүкәләрҙе өҙә саба беҙҙең балталар, ҡурыҙдарын һуйғас меҫкенкәйҙәр сыр яланғас ҡалып яталар.* Ғ. Дәүләтов.

**ҠУРЫЗЛАНЫУ** *к. төш. ҡар.* **ҡурыҙлау.**

**ҠУРЫЗЛАТЫУ** *к. йөкм. ҡар.* **ҡурыҙлау.**

**ҠУРЫЗЛАУ** *к.* Ҡурыҙ һалыу, ҡурыҙ ҡатлау. *Сабатаны ҡурыҙлау.*

**ҠУРЫЛДАЙ** *и.* Тын юлының боғарлаҡтан үпкәгә тиклемге тармаҡланып торған көпшә һымаҡ өлөшө.

**ҠУРЫЛЫУ** *к.* **1.** *төш. ҡар.* **ҡурыу.** *Ҡурылған картуф.* ■ *Ҡырҡырға ҡараһы ҡалмай май бөргән ике өйрәк ҡурылып та өлгөрҙө.* Ф. Иҫәнғолов.

**2.** Кибеп ҡороşоу. *Ирен ҡурыла. Тамаҡ ҡурыла. Ҡурылып ҡатыу.* ■ *Һалҡынлыҡтан ерҙә күп нәмәләр ҡурыла һәм сатнап ярыла.* Ҡ. Даян.

**3.** *күсм. һөйл.* Мөмкинселек кәмеү; ҡыҫынҡыла免ыу, наҡыҫланыу (аҡсаға һ. б. ҡарата). *Өй алғандан һуң аҡса яғы ҡурылды.*

♦ **Тын ҡурылыу** тын алыуы ауырлашыу; тын ҡыҫылыу. *Тауға менгән саҡта тын ҡурыла, күкрәк ҡыҫыла.* Ғ. Хәйри.

**ҠУРЫП** *и. ҡар.* **күреп.** *Әхмәҙи бай беҙҙе төрттөрөп, ауҙарып китте. Беҙ ҡарға таралдыҡ. Атайым беҙҙе яңынан ҡурыпҡа тултырҙы.* Ғ. Минһажев.

**ҠУРЫС** *и. ҡар.* **ҡурыҙ.**

**ҠУРЫУ** *к.* **1.** Ҡоролай йәки майға ҡыҙҙырыу. *Борсаҡ ҡурыу. Ит ҡурыу. Картуф ҡурыу. Ҡурҙаҡ ҡурыу. Ҡурмас ҡурыу.* ■ *Яңғыҙ кешегә күпме кәрәк? Картуф бешерә, ике-өс йомортҡа*

*һытып ҡура, һөт йәки ҡатыҡ эсә.* Б. Бикбай. / *күсм.* Яндырыу, өтөү. *Эҫе ел .. ҡайын япраҡтарын ҡура.* Я. Хамматов.

**2.** Бөрөштөрөп ҡыҫыу, киптереп бөрөштөрөү. *Тамаҡты ҡурыу.* ■ *Аяҡҡа үткән ҡар һыуы бөтә тәнде ҡурып алды.* З. Ғәлимов.

**3.** *күсм. диал. ҡар.* **ҡыҙҙырыу** 5.

◆ **Тынды ҡурыу** тын алышын ауырлаштырыу; тынды ҡыҫыу. *Ҡоро һауа тынды ҡура.* З. Биишева.

● *Яман ҡатын ир ҡурыр.* Әйтем.

**ҠУРЫШҠАҠ** *и. диал.* Ҡурышҡал.

**ҠУРЫШҠАЛ** *и.* Муйыл ағасының сайыры. *Ҡурышҡал ағыҙыу.*

**ҠУРЫШЫУ** *ҡ. диал. ҡар.* **ҡорошоу** [1].

**ҠУРЪЯҠ** *и.* Ағасҡа ҡунған епшек ҡар; лүшә. *Ағастарға ҡуръяҡ ҡунған.*

**ҠУРЪЯҠЛАНЫУ** *ҡ.* Ҡуръяҡ ҡуныу. *Ағас ботаҡтары ҡуръяҡланып, ҡар сыҡтарын йөкмәп таҡҡандар.* Р. Ниғмәти.

**ҠУСҠАЙЫУ** *ҡ. диал.* Сыҡайыу. *Ағиҙелдең яры ниндәй бейек, ҡая таштар тора ҡусҡайып.* К. Кинйәбулатова.

**ҠУСҠАҠ** *и. ҡар.* **ҡушҡаҡ.**

**ҠУСҠАР** *и.* **1.** Яй ғына хәрәкәт итә торған ҡабырсаҡлы экәм-төкәм. *Ҡусҡар ҡабырсағы.*

**2.** *анат.* Ҡолаҡ эсендәге ишетә торған ағза.

**3.** (*йәки* **ҡусҡар тәкә**) Беселмәгән һарыҡ тәкәһе. *Аҡ ҡусҡарҙан ҡорбан салыр инем үҙ илемә ҡайтып әйләнһәм* (Халыҡ йырынан). *Һин тыуғас та атайың туй ҡылғаны хәтереңдәме? Ҙур ҡара ҡусҡарҙы шунда һуйғаны хәтереңдәме?* Я. Юмаев.

**4.** *этн.* Бормас-бормас итеп сигелгән тәкә мөгөҙө рәүешендәге биҙәк. *Ҡусҡар төшөрөп сигеү.*

● *Айғыр ҡалдырһаң, йүнлеһен ҡалдыр; ҡусҡар ҡалдырһаң, йөнлөһөн ҡалдыр.* Мәҡәл.

**ҠУСҠАРБАШ** *и. иҫк.* Ҡәлғәләрҙе төкөтөп ҡыйрата торған тимер башлы йыуан бүрәнә.

**ҠУСҠАРЛАУ** *ҡ.* Ҡусҡар биҙәк төшөрөү. *Ҡусҡарлап сигеү.* ■ *Ҡурған һәм Силәбе өлкәһендәге башҡорт ҡатын-ҡыҙҙары .. сарыҡ ҡуныстарын, тула ойоҡтарын ҡусҡарлауға бик оҫта.* Н. Бикбулатов.

**ҠУСҠЫЛ** *с.* Салт ҡара түгел, ҡара ҡатыш; ҡараһыу. *Ҡусҡыл ер. Ҡусҡыл йөҙ. Ҡусҡыл болот. Ҡара ҡусҡыл. Ҡусҡыл йәшел.* ■ *Ҡуләгәләп ҡусҡыл бойҙайҙарҙы, иренеп кенә иҫкән ел менән бөҙрә башлы ап-аҡ төркөм болот үтеп бара баҫыу өҫтөнән.* Ғ. Мәсғүт. *Ҡусҡыл йәшел бөркәнсеген елләтеп йылы елгә, йәш килен төҫлө яҙ килде сәскәләр һибеп ергә.* М. Кәрим. *Ҡырҙарымда ҡусҡыл ужым ҡалҡа, мул йылдарҙың ҡотло игене.* Й. Солтанов.

**ҠУСҠЫЛЛАНЫУ** *ҡ.* Ҡусҡыл төҫкә инеү, ҡусҡыл төҫ алыу. *Алдыбыҙҙа ҡусҡылланып, йәшәреп тора таллыҡ, япраҡ аша ялтырап аҡҡан йылғаны күреп алдыҡ.* М. Кәрим.

**ҠУСҠЫЛЛАТЫУ** *ҡ.* Ҡусҡыл төҫкә индереү. *Ҡурғылыҡ буйҙарын ҡусҡыллатып киске эңер кейҙе сәкмәнен.* С. Ҡудаш.

**ҠУСТЫ** *и.* **1.** Кесе ир туған; эне. *Иртәнсәк ағалары йоҡонан тора. Уртансы ағаһы ҡустыһының аҙбарына килә* (Әкиәттән). / Йәшкә кесе һәр ир заты. *[Сыртланов:] Буҙаны уны, ҡустым, һоло йәки арпа ярмаһынан әсетеп яһайҙар.* С. Агиш.

**2.** *диал.* Байға ялланып йөрөгән малай; ялсы. *Ҡустылыҡта йөрөү.*

**ҠУСТЫЛЫҠ** *и.* Хеҙмәтсе, ялсы булыу эше; малайлыҡ. *[Сәйет] Бәләкәйҙән күршеһе Әхмәтхан байҙа ҡустылыҡта йөрөгән. Йомош-юлға етеҙ, эшкә барымлы булған ул.* Ә. Вахитов.

**ҠУҪТАР** *с.* **1.** Килешле генә, матур ғына булып йөрөүсән; ҡупшы, көйәҙ. *Ҡуҫтар кеше. Ҡуҫтар булыу.*

**2.** *күсм.* Һайланып, наҙланып ҡыланыусан. *Ҡуҫтар ҡыҙыҡай.*

**ҠУҪТАРБИКӘ** *и. һөйл.* Һайланып, наҙланып ҡылансыҡланған ҡатын-ҡыҙ.

**ҠУҪТАРЛАНЫУ** *ҡ.* **1.** Килешле, матур, ҡупшы булып йөрөү. *Ҡуҫтарланып йөрөү.*

**2.** *күсм.* Һайланып, наҙланып ҡылансыҡланыу. *Гөлниса, ҡара эш тип, ҡуҫтарланып торманы, ҡулына көрәк алып, бер нисә йыл ер ҡаҙҙы.* Ш. Янбаев.

**ҠУТАРА** *р.* Бик күп итеп; ҡутарғанса. *[Колька] ике ат менән Стәрле ягына тауарға йөрөй, ҡутара тейәп әйбер алып ҡайта.* Ж. Кейекбаев.

**ҠУТАРАҺЫНАН** *р.* Бик күп итеп; ҡутарғанса. *Ҡутараһынан ашау. Ҡутараһынан эсеү.* ■ *Өйөңә ҡутараһынан ҡусҭәнәс, һағынып көтөп торған әсәйеңә ҡулмәклек, галуш, эре биҙәкле ҡиҙе яулыҡ, .. алып ҡайттым.* Н. Мусин.

**ҠУТАРҒАНСА** *р.* Бик күп итеп, мул итеп; ҡутара. *Ул [уҡытыусы] ике-өс айҙың аҡсаһын ҡутарғанса ала ла, башы һуҡҡан яҡҡа олағып сығып китә.* Ж. Кейекбаев.

**ҠУТАРТЫУ** *ҡ. йөкм. ҡар.* **ҡутарыу.** *Өйҙө ҡутартыу.*

**ҠУТАРЫЛЫУ** *ҡ.* **1.** *төш. ҡар.* **ҡутарыу.** *Ҡутарылған өй.*

**2.** Ҡубып сығыу; аҡтарылыу. *Ул [Сәғиҙә] йәш саукаға тотонғайны, төбө-тамыры менән ҡутарылып килде лә сыҡты.* М. Тажи.

**3.** Аҫты-өҫкә килеп туҙыу; боларыу. *Бала-саға аулаҡта зыҡ ҡупҡан, өй эсе ҡутарылып ята.*

**4.** Хәл ҡылымдың *-п* формаһында ҡушма ҡылымдың беренсе компоненты булып, төп мәғәнәне көсәйтә; күп булып, мул булып. *Ҡутарылып уңыу. Утын күп, ҡутарылып ята.*

◆ **Эс ҡутарылыу** эс китеү.

**ҠУТАРЫУ** *ҡ.* **1.** Төбө-тамырынан әйләндереп ҡуптарыу; аҡтарыу. *Урынынан ҡутарыу. Ел ағастарҙы тамыры менән ҡутарып ташлаған.* / Төптән әйләндереп, ҡуптарып ҡаҙыу. *Арғы биттә таш ҡутара Сонайым* (Халыҡ йырынан). / *күсм.* Үткән хәл-ваҡиғаларҙы ҡабаттан иҫкә төшөрөү. *Ғәҙәттәге һүҙгә күстек. Кузьма үҙенең ҡыҙыҡтарын ҡутарып сығарҙы.* С. Агиш.

**2.** Аҫтын-өҫкә әйләндереп болғатыу; аҡтарыу. *Көлдө ҡутарыу.* ■ *Янгол Шәмсиәнең усаҡтағы күмеп ҡуйған ҡуҙын ҡутарып, тәмәке тоҡандырҙы.* Һ. Дәүләтшина. / Төрлө ерҙән әйләндереп, аҫҡылап ҡарау; аҡтарыу. *Китап ҡутарыу. Тоҡто ҡутарыу. Һандыҡты ҡутарыу.* ■ *[Алтынбикә:] Бына бит бына, өҫтә генә ятҡан! Ә минең ҡутармаған ер ҡалманы.* Ғ. Байбурин. / *күсм.* Аҫтын-өҫкә туҙҙырыу; ҡуптарыу. *Донъя ҡутарыу.*

**3.** Боҙоп, өлөш-өлөшкә таратыу, һүтеү. *Маши-*

наны ҡутарыу. ■ Әхмәҙулла бабай бураманың башын ҡутарып йөрөй ине. Ә. Вахитов.

**4.** *һөйл.* Ҡаҙандан табаҡҡа һоҫоу. *Аш ҡутарыу. Ит ҡутарыу.* ■ *[Айбикә] аш өйөндә .. эркет ҡутарып, уны тоҡҡа ҡойоп, һарҡытырға элде.* Һ. Дәүләтшина.

**5.** Хәл ҡылымдың *-ып* формаһында ҡушма ҡылымдың беренсе компоненты булып, төп мәғәнәне көсәйтә; бик күп, бик күп итеп. *Егеттәр тырышып эшләй, ҡутарып аҡсаһын ала.* Н. Мусин.

**ҠУТЫР** *и.* Ҡысыу йәки яра өҫтөнә эренләп, суғырмаҡланып ҡатҡан нәмә. *Ҡутырға май һөртөү.* ■ *Ҡара себен һау ергә күҙ һалмайҙыр, бар булһа яра, ҡутыр — шунда ҡуныр.* Аҡмулла.

● *Ҡысымаған ерҙе тырнаһаң, ҡутыр сыға.* Мәҡәл.

**ҠУТЫРЛАУ** *ҡ.* Ҡутырға әйләнеү, ҡутырлы булыу. *Кешеләр эргәмә ултырмай, бете йоға, ти. Етмәһә, иш өҫтөнә ҡуш тигәндәй, баш ҡутырлап китте.* С. Агиш.

**ҠУТЫРЛЫ** *с.* Ҡутыр менән ҡапланған, ҡутыр сыҡҡан. *Ҡутырлы баш.* ■ *Әбей энәне муҡтән алып, һелкеп-һелкеп ҡуя — энә ҡутырлы бер кешегә әйләнә* (Әкиәттән). **Ҡутырлы баҡа һымаҡ** (*йәки* **кеүек**) бик йәмһеҙ ҡатын-ҡыҙға ҡарата әйтелә. *Ҡыҙҙарҙың береһе иҫ киткес һылыу, икенсеһе, ҡутырлы баҡа һымаҡ, ҡот осҡос ямаҡ, ти* (Әкиәттән).

◆ **Ҡутырлы баҡа** *диал.* әрмәнде.

**ҠУТЫРМАҠ** *и. диал. ҡар.* **суғырмаҡ** 2.

**ҠУТЫРМАҠЛАНЫУ** *ҡ. диал.* Суғырмаҡланыу. *Ҡутырмаҡланып тороу.* ■ *Ошо таш юл, ҡутырмаҡланып уңалған ҡамсы эҙе төҫлө, Пугачёв һәм Салауаттарҙың даулы заманынан бирле дала арҡаһында ярылып ята икән, тип һөйләгәнде ишеткәнем бар ине.* Ш. Янбаев.

**ҠУТЫРМАҠЛЫ** *с. диал.* Суғырмаҡлы. *Ҡутырмаҡлы юл.* ■ *Ҡыуғынсылар ҡутырмаҡлы ҡарағастан һапланған бәғүрҙәрен ташлап, ошо ҡаҙан эргәһенә йүгерҙеләр.* Ш. Янбаев.

**ҠУШ** *с.* **1.** Үҙ-ара береккән йәки берләшкән ике берәмектән торған. *Ҡуш ҡайын. Ҡуш ҡыңғырау. Ҡуш тәҙрә. Ҡуш урай. Ҡуш үркәс.* ■ *Бер тупраҡҡа тәүләп аяҡ баҫтыҡ, бер тамырҙан сыҡҡан ҡуш ҡалдай.* М. Кәрим. *Һыуҙың ғына буйы ай ҡуш тирәк, башҡынайын сукламаҡ кәрәк* (Халыҡ йырынан). / Ике һыңарлы; пар. *Ҡуш йоҙроҡ. Ҡуш ҡул. Ҡуш ус.* ■ *Ҡуш аяҡҡайҙарын тиңдәр баҫып, яуап бирә Насир түрәгә* (Халыҡ йырынан).

**2.** *и. мәғ.* Икәүҙең бер һыңары; иш. *Бүгәсәүгә ҡушылып, ир-батырға ҡуш булып, шул теләкте яулайыҡ, шул иректе яулайыҡ.* Салауат Юлаев. *Минең менән ҡуш булыуҙы әллә төштә күрҙеңме?* (Халыҡ йырынан).

◆ **Иш янына ҡуш** (*йәки* **ишкә ҡуш**) **булыу** нимәгәлер өҫтәмә ҡушымта булыу. *Ерҙең күбеһе көҙҙән һөрөлмәгән. Аттар аҙ булғас, һыйырҙарҙың көсө лә иш янына ҡуш була шул.* Ғ. Ибраһимов. **Ҡуш ат** ҡушлап егелгән ат. **Ҡуш боғаз** үҙен шәпкә һанап, аҡырып-баҡырып йөрөгән кешегә ҡарата әйтелә. **Ҡуш имсәкле** үҙенән сыҡҡан йомро ике ҡашы булған (биҙәмес нәмәләргә ҡарата). *Ҡуш имсәкле алҡа.* ■ *Ҡуш имсәкле көмөш йөҙөк бүләк булһын, бай улы.* «Заятүләк менән Һыуһылыу». **Ҡуш йөрәкле** ҡурҡыу белмәгән, ҡыйыу; батыр. *Ауылда батыр, ҡуш йөрәкле кешеләр йәшәгән. Мал ҡыуар көтөүлектәре, бесән сабыр болондары Ағиҙелдә ике яҡлап йәйрәп, күкрәп ятҡан.* Ә. Вахитов. **Ҡуш керпек** бер төптән сығып эскә ҡарай үҫкән керпек (ғәҙәттә уны йолҡалар). *Ҡуш керпек күҙҙе өйкәй.* **Ҡуш килеү** тиң булып, тап килеү; пар булыу. *Тәүге ҡатыны Сафия Асанбайға бик ҡуш килгән.* И. Кинйәбулатов. **Ҡуш ҡул менән** ҙур теләк менән, шатланып, ҡыуанып. *Ҡуш ҡул менән, дүрт күҙ менән көттөк һеҙҙе аяҙҙа, һыуһап көттөк, сарсап көттөк, ялуарҙыҡ ҡыуын яҙҙа.* Р. Ғарипов. **Ҡуш мунсаҡтай** (*йәки* **мунсаҡ кеүек**) бер-береһенән һис айырылмаған, бер-береһенә ныҡ оҡшаш; һәр ваҡыт бергә булған кеше йәки малға ҡарата әйтелә. *Ҡуш мунсаҡтай Гөлбәзир бер ҡыҙ менән икәүләп килгән.* М. Буранғолов. *Урмансы ниҙәр күрһә, ат башына ла шул төшә. Улар ҡуш мунсаҡ кеүек.* Т. Килмөхәмәтов.

● *Ҡурҡҡанға ҡуш күренә.* Әйтем.

**ҠУША** [1] *р.* **1.** Бергә ҡатнаштырып; бергә ҡушып. *Ҡуша һалып бешереү.* ■ — *Ҡарағат япрағы менән ҡуша ҡайнатылған мәтрүшкә етмеш төрлө ауырыуҙан дауа.* Б. Бикбай.

**2.** Бер-береһе менән тоташтырып йәки терәтеп, беректереп; бергә. *Ҡуша тегеү. Ҡуша тотоу.* ■ *Зиннәтулла .. ҡуша бәйләнгән аскыстарҙы Ҡолсобайға һондо.* Я. Хамматов. / Үҙ-ара берегеп; йәбешеп. *Ергә ҡуша туңыу.*

**3.** Икеһе бергә, берлектә; бергә. *Ғатаулла .. ҡыҙҙы нәҙек биленән эләктереп, уның менән ҡуша ергә ауҙы.* Й. Солтанов.

**ҠУША** [2] *и. диал. ҡар.* **ҡушаға** 2. *Ҡушаң менән ҡуш ағарып, аҡ сәсле, һары тешле булып ултырырһың.* М. Буранғолов.

**ҠУШАҒА** *и.* **1.** Яҡын ҡорҙаш; иптәш, уҙаҡ, дуҫ. *Ҡушаға булыу.* ■ *Кейгән дә кейемең тар ҡуйтыр, әйҙә, ҡушаға, яныма ултыр* (Халыҡ йырынан).

**2.** Үҙеңә тиң булған ғаиләә иптәше (иргә — ҡатын, ҡатынға — ир) *Ҡушағаңа ҡушылып, ҡыуышлы бул, киленсәк* (Туй йырынан). **Ҡушағаң менән ҡуша ҡартай** ир менән ҡатынға бәхетле, татыу, оҙон ғүмер теләгәндә әйтелә.

● *Ҡарт кейәү ҡушаға булмаҫ.* Әйтем.

**ҠУШАҒАЙ** *с. диал.* Ҡуштан. *Ҡушағай ҡатын. Ҡушағай булыу.*

**ҠУШАҒАЛАНЫУ** *ҡ. иҫк.* Ҡушағалы булыу.

**ҠУШАҒАЛАШЫУ** *ҡ. иҫк.* Ҡушаға булышыу. *Ҡушағалашып йөрөү.*

**ҠУШАЙ** *и. диал.* Ҡуштан. *Хан бер көн үҙенең ҡушайҙарын, ошаҡ ташыусыларын йыя.* «Ҡуҙыйкүрпәс менән Маянһылыу».

◆ **Ишәй менән ҡушай** бер-береһенән айырылмай, һәр саҡ бергә йөрөгән кешеләр тураһында шаярып әйтелә. *[Өләсәһе:] Ятығыҙ инде, төн убырҙары, көнө буйы эттәй сабалар ҙа, ҡискә керһәң, әйҙә йоҡо маҙаһы бирмәйҙәр, ишәй менән ҡушай!.. тип һуҡранып ала.* Ф. Иҫәнғолов.

● *Ишәй ишен таба, ҡушай ҡушын таба.* Әйтем.

**ҠУШАҠ** [1] *и.* Билгә быуа торған киң бау; билғау. *Ҡушаҡ быуыу. Ҡушаҡҡа тағыу.* ■ *Атыр*

*ғына инем — түшәк юк, быуыр ғына инем — кушаҡ юк. Тартыр ғына инем ҡурайымды, ҡурай тартыр өсөн форсат юк* (Халыҡ йырынан).

**ҠУШАҠ**[2] *и.* Ирле-ҡатындың бер һыңары, ише. **Ҡушылған ҡушағың менән тигеҙ ғүмер ит** ир менән ҡатынға оҙон ғүмер теләгәндә әйтелә.

**ҠУШАҠ**[3] *и.* Яҡын урын; эргә, ян. *Ҡушаҡта ултырыу.* ■ *Минең күҙ ҡушаҡҡа тағылған күрән атта булды. Ул ҡойоп ҡуйған кеүек матур. Оҙон ҡойроҡло хайуан. Түштәре киң, күҙҙәре ҙур.* Д. Юлтый.

**ҠУШАҠЛАУ** *ҡ.* **1.** Бергә ҡушыу, ҡушлау. *Ике нәмәне ҡушаҡлап бәйләү.* ■ *[Тоҡан:] Кәңәш һүҙгә былай ҡаршы торһаң, бир ҡыҙыңды әйҙә ҡушаҡлап!* Х. Ғәбитов.

**2.** Эргәләш итеү; ҡушарлау. *Ҡушаҡлап барыу. Ике нәмәне ҡушаҡлап бәйләү.*

◆ **Ат ҡушаҡлау** һыбай йөрөгәндә алмаш өсөн янға ат етәкләп алыу. *Ат ҡушаҡлап сабырҙар фарман алып килгәндә, «Ил һаҡларға яуға!» — тип, илгә оран һалғанда.* М. Буранғолов. *Илкәйенә ингән яуға ҡаршы ат ҡушаҡлап сапҡан ир яҡшы* (Халыҡ йырынан).

**ҠУШАҠЛАШЫУ** *ҡ. урт. ҡар.* **ҡушаҡлау.** *Ҡушаҡлашып ятҡан ике тауҙы урап сыҡҡан йылға буйында ауыл ята. Йылға ситтәрендә иңкешләнеп үҫкән муйылдар...* М. Тажи.

**ҠУШАҠЛЫ** *с.* Берләштерелгән ике берәмекле; ҡуш. *Ҡушаҡлы кәмә.* ■ *Ҡуҙыйкүрпәс ханға рәхмәт әйтеп хушлашып, ҡушаҡлы атта Маянһылыу менән һүҙ ҡуйышҡан урынға табан юл тота.* «Ҡуҙыйкүрпәс менән Маянһылыу».

**ҠУШАЛЫ** *с.* Берләшкән ике берәмекле; ҡуш. *Ҡушалы өй. Ҡушалы ҡарағас.* ■ *Алтын ғына балдаҡ ҡушалы һабаҡ, ерғә ғенә төшһә, табылмай* (Халыҡ йырынан).

**ҠУШАМАТ**[1] *и.* Тағылған исем; ләҡәп исем. *Ҡушамат тағыу.* ■ *Мине «Имән Шәрәй» тип йөрөтәләр. Күптән, әллә ҡасан таҡҡандар инде ул ҡушаматты.* Н. Ҡәрип. / Йәнлеккә бирелгән яңғыҙлыҡ исем. *Көсөккә ҡушамат биреү. Һыйырға ҡушамат биреү.*

**ҠУШАМАТ**[2] *и.* Һырға туйына ир бала яғынан ҡуйылған егет менән ҡыҙ бала яғынан ҡуйылған ҡыҙ (егет батыр, ҡурайсы, бейеүсе, ҡыҙ бик һылыу, йырсы, бейеүсе булырға, ике баланың бәхете өсөн шул туйҙа улар өйләнешергә тейеш булған). *Ир баланың ата-әсәһе килен буласаҡ балаға алҡа, шәл, ә ҡыҙ баланың ата-әсәһе кейәү буласаҡ балаға нағышлы билғау, сиккән таҡыя кеүек һибә алып килә. Шуларҙы тапшырышҡанда балаларға ҡушаматтар ярҙам итә. Ир баланың ата-әсәһе ҡушамат ҡыҙға шәл-яулыҡ, ҡыҙ баланың ата-әсәһе ҡушамат егеткә йөҙөк бирә.* М. Буранғолов.

**ҠУШАМАТЛЫ** *с.* Ҡушамат[1] йөрөткән. *«Ҡашҡар» ҡушаматлы эт. «Шаҡый» ҡушаматлы ат.* ■ *Ул [И. Солтанов] Омскиҙа Колчак төрмәһенән ҡасҡан Шәриф Таймасов арҡылы «Ҡарый» ҡушаматлы революционер менән танышҡа.* Я. Хамматов.

**ҠУШАНЫУ** *ҡ.* Билгә быуыу.

● *Буҫтауы туҙһа, ситен ҡушан.* Мәҡәл.

**ҠУШАР** *с.* Бергә булған ике берәмекле; ҡуш. *Ҡушар бағана. Ҡушар тәгәрмәсле машина. Ҡушар булыу. Ҡушар итеү.*

**ҠУШАРБАШ** *и. ҡар.* **туларһыҡ.**

**ҠУШАРЛАТЫУ** *ҡ.* Ике нәмәне эргәләш итеү; ҡушар итеү.

**ҠУШАРЛАУ** *ҡ.* **1.** Икеһен бергә итеү; ҡушар итеү. *Ҡушарлап бәйләү. Ҡушарлап ултыртыу.* ■ *Сауҙагәрҙәрҙең ҡушарлап йәки өсәрләп еккән аттары ла үҙҙәре кеүек һимеҙ, һалмаҡ, киң аҙымлы була.* А. Карнай.

**2.** Эргәләш булыу, ҡушар булыу. *Ҡушарлап баҫып тороу. Ҡушарлап ултырыу.* ■ *Ғәлимдәрҙең берләм юлы тағы ла тарая төштө, ҡушарлап барып булмай башланы.* З. Биишева.

**3.** Икәүләп бергәләшеү. *Ике егет ҡушарлап гармун уйнай.* Р. Солтангәрәев.

**ҠУШАРЛАШЫУ** *ҡ. урт. ҡар.* **ҡушарлау.** *Ҡушарлашып килеү.* ■ *Ҡушарлашып торған ике тауҙы урап сыҡҡан йылға буйында ауыл ята.* М. Тажи.

**ҠУШАУ** *ҡ.* Ҡуш итеү; ҡушарлау. *Ҡушап бәйләү.*

**ҠУШАУЫҘ** *и.* Ике бүлекле, ике ауыҙлы түмәр умарта.

**ҠУШАЯҠ** *и. диал.* Ялман.

**ҠУШБАШ** *и.* Сазандар ғаиләһенә ингән йылға балығы; ажау. *Ул спиннингын һәлтәй, эркеү-эркеү булып йөҙгән ағасъяңаҡтар, ҡушбаштар, оптолар бер-бер артлы ҡабып ҡына тора.* Ғ. Ибраһимов.

**ҠУШЙЕЛКӘ** *и.* Ҡамыт ҡыҫҡандан шешеп, мундаһы сереп ағып, ҡушарланып ҡалған ат елкәһе. *Атыбыҙ ҡушйелкә булып ҡалды.*

**ҠУШКЕНДЕК** *и.* Кендек төбө ярыҡ булып тыуған ҡолон ауырыуы. *Ҡолон ҡушкендек булһа тарма еп менән тегәһең, уңала ла китә.*

**ҠУШКӨБӘК** *и.* Ике көбәкле һунар мылтығы. *[Юламан] ҡушкөбәктән аллы-артлы ике тапҡыр атты.* Ф. Иҫәнғолов.

**ҠУШҠАҠ** *и.* Үркәстәренең төбө бер булып, осо ғына икегә айырыла биреп торған дөйә.

**ҠУШҠАНАТ** *и.* Ҡанаты ҡайырылып оса алмай торған бал ҡорто ауырыуы. *Ҡушҡанат булыу.*

**ҠУШҠАР**[1] *и.* **1.** Ҡул енсегенең ҡуш тупалсаҡ булып торған түбәнге осо.

**2.** *диал.* Енсек.

**ҠУШҠАР**[2] *и. диал. ҡар.* **ҡусҡар** 3. *Аҡ ҡушҡар ҙа ҡорбан салыр инем, тыуған илгә ҡайтһам әйләнеп* (Халыҡ йырынан).

**ҠУШЛАУ** *ҡ.* **1.** Ике нәмәне ҡуш ҡуйыу; ҡуш итеү. *Ҡушлап ултыртыу.* ■ *Ҡушлап та ҡушлап ат ектем, уртаһына тай ектем* (Халыҡ йырынан). *Ҡушлап-ҡушлап баҫырға ҡуш төймәкәйҙәрем юҡ минең* (Халыҡ йырынан). / Берләштереп ҡуш итеү; ишле итеү. *[Һыуһылыу:] Мине арбап үҙеңә, яңғыҙ башың ҡушланың.* «Заятүләк менән Һыуһылыу».

**2.** Эргәләш булыу, ҡуш булыу. *Ҡушлап килеү. Ҡушлап ултырыу.* ■ *Ә Татлыбай атын һалмаҡлатып, яндан барҙы ҡушлап бик оҙаҡ.* З. Биишева.

**3.** Икәүләп бергәләшеү; иш булыу. *Ҡушлап эшләү.* ■ *Ҡоҙа менән ҡоҙағый ҡушлап бейей.* М. Буранғолов.

**ҠУШЛАШЫУ** *к. урт. кар.* **ҡушлау.** *Ҡушлашып ултырыу. Ҡушлашып йырлау.*

**ҠУШМА** [1] *с.* **1.** Бер нисә өлөштән ҡушылған. *Ҡушма исем. Ҡушма хәбәр. Ҡушма һан.* ■ *Бер нисә һөйләмдән төҙөлгән һөйләм ҡушма һөйләм тип атала.* Ғ. Сәйетбатталов.

**2.** Бер нисә төрҙән ҡатнаштырылған; ҡатнаш. *Ҡушма аҙыҡ.*

**3.** Өҫтәп ҡушылған; өҫтәмә. *Ҡушма доклад.*

**ҠУШМА** [2] *и.* Кирәгәнең бер быуыны. *Аҡым кирәгә кейеҙен ҡутәреп, кирәгә ҡушмаһының ебен киҫә лә, эскә инеп Шәүрәне уята.* (Хикәйәттән).

**ҠУШМЫЛТЫҠ** *и. диал.* Ҡушкөбәк.

**ҠУШСЫ** *и.* Юл йөрөгән кешеләргә тәрбиәләп, хеҙмәтен үтәп йөрөгән кеше. *Иртәнсәк тороп, тамаҡ туйҙырып алғас, ҡушсы егет ҡалған ашамлыҡтарҙы йыйыштырып, аттарҙы килтергән арала [Кинйә].. эргәләге Ҡарауыл тауына ҡарап торҙо.* Ғ. Ибраһимов.

◆ **Ат ҡушсы** юл йөрөгәндә атын ҡарап, бергә оҙатып йөрөгән кеше.

**ҠУШТАБАҠ** *и. диал.* Ҡоштабаҡ. *Ашты ҡуштабаҡҡа һоҫоу.*

**ҠУШТАМАҠ** *и.* Тамаҡ биҙененең тупайып үҫеүенән барлыҡҡа килгән ауырыу.

**ҠУШТАН** *с.* Кемгәләр ярарға, яраҡлашырға тырышып, һүҙен ҡеүәтләп, өлтөрәп йөрөгән; ялағай. *Хәҙрәт инеү менән дөйөм бер сәләм бирҙе. ..Ҡуштан шәкерттәрҙең береһе уның оҙон таяғын кәҙерләп ҡулынан алып китте.* М. Ғафури. *Һөйгән генә йәрең ҡуштан булһа, инеп бара йөрәк-бауырға* (Халыҡ йырынан).

● *Ҡатын ҡуштаны иргә яраған, ир ҡуштаны бейгә яраған.* Мәҡәл. *Ҡуштан ҡатын ире сыкһа — кейенер, ире ҡайтһа — көйөнөр.* Мәҡәл.

**ҠУШТАНЛАНЫУ** *к.* Ҡуштанлыҡ күрһәтеү, ҡуштан булыу; ялағайланыу. *Хыянатты дошман эше, тимә. Дошмандан кем көтһөн изгелек. Эс-бауырға инеп ҡуштанланған дуҫтарыңды барла иң элек.* Г. Юнысова. *[Ишәк:] Беҙҙең хужа этте ярата. .. Эт ҡуштанлана белә шул: хужа алдында һикергеләгән була, ҡойроғон болғаған була* (Әкиәттән).

**ҠУШТАНЛАУ** *к.* Ҡуштанлыҡ итеү. *Ҡуштанлап йөрөү.*

**ҠУШТАНЛЫҠ** *и.* Ҡуштан булыу сифаты. *Байҙар, аҡһаҡалдар улар алдында ҡуштанлыҡ күрһәтеп, якшатлы булырға тырышып, йомағайланып, һырпаланып йөрөйҙәр.* Ш. Шәһәр.

**ҠУШТАН-ЯРАН** *и. йыйн.* Ярарға тырышып йөрөгән кешеләр; ярамһаҡтар. *Тупаҫ һәм холоҡһоҙ был кантонга Әпкәләй кеүек ҡуштан-ярандар таяу.* Ғ. Хөсәйенов.

**ҠУШЪЯУЛЫҠ** *и. этн.* Башҡорт ҡатын-ҡыҙҙарының ике француз яулыкты ҡушып яһаған баш ябыуы. *Ҡушъяулыҡ эйәксене. Ҡушъяулыҡ тәңкәһе. Ҡушъяулыҡ уҡаһы.* ■ *Олораҡ апайҙар, еңгәләр, килендәр ҡушъяулыҡ ябына. Итәге ҡайыулы ҡулдәк, эреле-ваҡлы тәңкәләр менән сыбарланған камзул кейә. Ә аяҡта инде арты ҡайылған семәрле сарыҡ..* К. Мәргән.

**ҠУШЫ** *и.* Башы менән арҡаһы ҡара йәки һор, ҡабырғаһы менән ҡорһағы алһыу аҡ төҫлө, түбәһе суҡлы, оҙон тар моронло эре сумғыс өйрәк; балыҡсы өйрәк, беле.

**ҠУШЫЛДЫҠ** [1] *и.* Ҙурыраҡ һыуға барып ҡойған йылға. *Агиҙелдең ҡушылдығы Дим. Эйектең ҡушылдығы Һүрәм.*

**ҠУШЫЛДЫҠ** [2] *и. мат.* Ике һанды ҡушҡандан барлыҡҡа килгән һөҙөмтә. *Ҡушылыусыларҙың урынын алыштырыу менән ҡушылдыҡ үҙгәрмәй.*

**ҠУШЫЛДЫРЫУ** *к.* Ҡушылырға мәжбүр итеү, ҡатышырға мөмкинлек биреү. *Һүҙгә ҡушылдырыу. Ике йәш йөрәкте ҡушылдырыу.*

**ҠУШЫЛМА** *с.* Бер нисә төр өлөштән ҡушылған; ҡатнаш. *Ҡушылма аҙыҡ.*

**ҠУШЫЛЫУ** [1] *к.* **1.** *төш. кар.* **ҡушыу** [1]. *Ҡом ҡушылған балсыҡ. Бесәнгә ҡушылған ат.* ■ *Туғарылмай ғына бесәнгә ҡушылған атының арҡалығын ҡүтәргәндә, шулай ҙа ҡулдары өҙлөкһөҙ ҡалтырана, бармаҡтары яҙылырға теләмәй тиҫкәреләшә ине [Садрисламдың].* Ф. Исәнғолов.

**2.** Кемгә йәки нимәгәләр килеп тоташыу, берегеү. *Шишмә анау матур Еҙем йылғаһына барып ҡушылған.* Ә. Бахитов. / Кемдер араһына килеп инеп, берләшеү. *Бүгәсәүгә ҡушылып, ир-батырға ҡуш булып, шул иректе яулайыҡ.* Салауат Юлаев. *Алты ҡолас ала бейәм ҡушылып киткән — ул да юҡ.* «Аҡһаҡ ҡола». / Кемдеңдер эше-хәрәкәтенә ҡатнашыу, бергәләшеп башҡарыу. *Йырға ҡушылыу. Кәңәшкә ҡушылыу. Ҡурайға ҡушылыу. Һүҙгә ҡушылыу. Шау-шыуға ҡушылыу. Ярышҡа ҡушылыу. Ҡушылып йырлау. Ҡушылып һөйләү.* ■ *Ғәйшә бер ситтәрәк тороп, уларға ҡушылып йылмая.* С. Агиш.

**3.** Үҙ-ара берләшеү, бергә килеп тоташыу. *Магнит тартҡан кеүек, бер-беренә ҡушылды тик ҡайнар ирендәр.* Ғ. Сәләм. *Һөйгән генә йөрәк, янған йөрәк ҡушылмай ҙа булырмы пар булып* (Халыҡ йырынан).

**4.** Үҙ-ара берләшеп, ҡатнашыу, аралашыу. *Уның [әсәнең] һәр бер көнө ҡүҙ йәше менән ҡушылып аҡҡан.* Б. Бикбай.

**5.** Инәһенә килеп имергә тотоноу (быҙауға ҡарата). *[Гөлбикә:] Көтөү ҙә ҡайтып бөткән икән. ..Быҙауҙарым ҡушылмаған булһа ярар ине.* Д. Юлтый.

**6.** Өйләнешеп, бергә тора башлау; ҡауышыу. *Бибигөл менән Низам һөйөшөп ҡушылдылар. Улар колхозда күренекле кешеләр: береһе — оҫта тимерсе, икенсеһе — уңған һауынсы.* Б. Бикбай.

◆ **Үҙенеке ҡушылыу** аҡылға еңеләйеү.

● *Айырылған ир аҙыр, ҡушылған ир уҙыр.* Мәҡәл.

**ҠУШЫЛЫУ** [2] *к. төш. кар.* **ҡушыу** [2]. *Ҡушылған йомош.*

**ҠУШЫЛЫУСЫ** *и. мат.* Ҡушыла торған һан.

**ҠУШЫЛЫШЫУ** *к. урт. кар.* **ҡушылыу** [1].

**ҠУШЫМ** *и.* **1.** Өҫтәлгән, ҡушылған нәмә; ҡушылдыҡ. // *Ҡушым йылға.* ■ *Лена һәм уның ҡушым йылғаларында ГЭС-тар төҙөгәндә, улар йылына 300 миллиард киловатт-сәғәт электр энергияһы биреп торор.* М. Хисмәтов.

**2.** Өҫтәп, ялғап ебәрерлек нәмә; ҡушымта. *Аҙыҡҡа ҡушым булыу.*

**ҠУШЫМЛЫ** *с. кар.* **ялғаулы.** *Аҡлы ситса күлдәгемдең билбауҙары ҡушымлы* (Халыҡ йырынан).

**ҠУШЫМТА** *и.* **1.** Нимәгәлер ҡушылып, аралашҡан нәмә. *[Лабораторияла] химик материалдарҙы һәр төрлө ҡушымтанан таҙарталар.* Ә. Ихсан. / Төрлөһө ҡушылып, аралашҡан нәмә; ҡатышма.

**2.** Өҫтәп, ялғап ҡуйылған нәмә; өҫтәмә. *«Яңы ауыл» газетаһы башта «Башкортостан» газетаһына ҡушымта рәүешендә .. сыға башланы.* Т. Йәнәби. / Өҫтәп, ялғап ебәрерлек нәмә. *Ҡушымтаға бүтән нәмә булмағас, ит менән ҡорот оҙаҡҡа барманы* (Әкиәттән).

**3.** Йырҙың һәр куплет аҙағында ҡабатлана торған өлөшө. *Мәғфүрә ул йырҙың һүҙҙәрен ишетә алманы. Ә уның ҡушымтаһы, үҙенән-үҙе килеп, күңелгә һеңгән һымаҡ, бөгөн дә иҫенән сыҡмай йөрөгән әрнетә.* Һ. Дәүләтшина.

**ҠУШЫРЫУ** *к. диал.* Ҡаушырыу.

**ҠУШЫУ** [1] *к.* **1.** Бер нәмәне икенсеһенә килтереп беректереү; өҫтәү. *Сәйҙе кәнфит ҡушып эсеү.* ■ *Рәхимә .. бер телем ҡаҙыға бер ҡырҡым ит ҡушып, Мәғфүрәгә бирҙе.* Һ. Дәүләтшина. *[Мәсем хан:] Дәүләтемдең яртыһын һый ҡыламын мин, наҙлы ҡыҙым Ғәүһәрҙе ҡушып биреп, ун ике бей өҫтөнән бей ҡыламын мин.* «Бабсаҡ менән Күсәк». / Кемгә йәки нимәгәлер килтереп, берләштереү. *Ваҡ ҡына ике колхозды «Ҡыҙыл партизанға» ҡушҡас, сәсеү ере дүрт йөҙ һикһән гектарға етте.* М. Тажи.

**2.** Бер һанға икенсе һанды өҫтәү. *Ҡушыу билдәһе. 18-гә 17-не ҡушырға, 20-не алырға — нисә сыға?*

**3.** Бергә килтереп, үҙ-ара берләштереү. *Ҡушып тегеү.* ■ *Ошо төндә улар һүҙ ҡуйышты тормош юлын бергә ҡушырға.* Ғ. Сәләм.

**4.** Бергә берләштереп, аралаштырыу. *Суҫҡа аҙығына витаминдар ҡушалар.*

**5.** Ашарға йәки имергә ҡуйыу (малды). *Бы-ҙауҙы ҡушыу. Атты һолоға ҡушыу.* ■ *Атты туғарып, саналағы бесәнгә ҡуштыҡ.* С. Кулибай.

**6.** Ирле-ҡатынлы итеү; кейәү йәки ҡыҙ ҡуйынына һалыу; ҡауыштырыу. *Кейәүгә ҡушыу.* ■ *Хужа ҡатын таныш-белештәрен тиҙ генә саҡырып, һимеҙ ҡуй һуйып, егет менән ҡыҙҙы ҡушып та ҡуйған* (Әкиәттән).

◆ **Баш ҡушыу** 1) берҙәмлеккә килеү, берләшеү. *[Ҡормой:] Ыласын үҙ ыласынын тапмайынса, ҡауҙы менән баш ҡушамы ни?* Б. Бикбай; 2) ылығыу, эйәләшеү. *[Нигмәт:] Анау Өскүҙ Сафаның һыйыры ҡасып, йөҙәтеп бөттө. Яңы алынған һыйыр, бер ҙә баш ҡушмай.* Н. Ҡәрип. **Бергә биште ҡушыу** нәмәне арттырып һөйләү; шапыртыу. *Яңы ваҡиғалар тураһында һөйләйҙәр, ялғанлайҙар, бергә бише ҡушалар.* И. Насыри. **Исем ҡушыу** 1) тыуғас та балаға исем беркетеп ҡуйыу. *Сәғиҙә менән Зыя ла әбейҙең теләгенә ҡаршы килмәне, балаға Булат тип исем ҡуштылар.* М. Тажи; 2) кешегә ҡушамат биреү, ҡушамат тағыу. **Һүҙ ҡушыу** һүҙ менән өндәшеү. *Күршелә яткан иптәшкә һүҙ ҡушып, минән һуң фронтта ниҙәр булғанын һораштым.* Ш. Хоҙайбирҙин.

● *Атаһы айырымды яу ҡуша, өйәрө айырымды бау ҡуша.* Мәҡәл.

**ҠУШЫУ** [2] *к.* **1.** Ниҙер башҡарырға әмер биреү, бойороу. *Шул сакта тирмәм ишеген асырға ҡуштым.* Салауат Юлаев. / Башҡарырға эш йөкмәтеү. *Йомош ҡушыу. Эш ҡушыу.* ■ *[Эткол] эште батраҡтарына ҡушты ла, үҙе .. тикшереп йөрөнө.* Ғ. Дәүләтшин. / Нимәлер эшләүҙе талап итеү. *[Батыр әйтә], кәрәк икән мин сәфәр йөрөрмөн, ти, яҙмышымдың ҡушҡанын күрермен, ти.* «Бабсаҡ менән Күсәк». *Аҫыл ғына ирҙәр тырышып йөрөр, эшләйем тип, аҡыл ҡушҡанын* (Халыҡ йырынан). *Тимер уның [докторҙың] ҡушыуына һүҙһеҙ буйһоноп ултырҙы. Был докторға окшап етмәне.* Б. Бикбай.

**2.** Ниҙер башҡарырға ылыҡтырыу. *Йомошҡа ҡушыу. Эшкә ҡушыу.* ■ *Дүрт комбайнды арпаға ҡуштылар.* Ә. Атнабаев. *Мәскәй .. Килтәймәргәндең һеңлеһен баш ҡарарға ҡушҡан* (Әкиәттән).

◆ **Кем ҡушҡан (***йәки* **ҡушты)** бер эш, ҡылыҡ өсөн шелтәләгәндә әйтелә. *[Ғәйни:] Кем ҡушты һиңә минең ерҙән барып был тиклем көлтә тейәргә!* Т. Йәнәби.

● *Асыу — дошман, аҡыл — дуҫ, асыуыңа аҡыл ҡуш.* Әйтем. *Эткә ҡушһаң, һөйәк килтерер.* Мәҡәл.

**ҠУЯҒА** *и.* Эйәрҙең йәнлек аҫа торған урыны. *Ҡуяғаға аҫып ҡыр бүреһен егет менде бейек сағылға* (Халыҡ йырынан).

**ҠУЯН** *и.* **1.** Кимереүселәр ғаиләһенә ҡараған ҡыҫҡа ҡойроҡло, оҙон шеш ҡолаҡлы кимереүсе йәнлек. *Ата ҡуян. Бала ҡуян. Инә ҡуян. Ҡуян тиреһе. Ҡуян тоҙағы.* ■ *Һоро ҡуян, йәмле яҙҙар килгәс, тыуҙыра ла һоро балалар, оҙон ҡолаҡтарын ҡарпайтышып, улар үкһеҙ тороп ҡалалар.* Р. Ғарипов. **Аҡ ҡуян** урманда, туғайҙа була торған бәләкәйерәк кәүҙәле ҡуян. *Аҡ ҡуян йөнө бик йомшаҡ, мамығы күп ула.* К. Фәхретдинов. **Тал ҡуяны** *диал.* аҡ ҡуян. **Үр ҡуяны** ҡалҡыуыраҡ ерҙә йөрөй торған һырт буйы һорғолт эре ҡуян; үрғуян.

**2.** *с. мәғ.* Шул йәнлектең тиреһенән тегелгән. *Ҡуян кәпәс, һырма көпө, бәләкәс тоҡ арҡала.* С. Кулибай.

**3.** (*йәки* **йорт ҡуяны)** Йортта аҫрай торған оҙон ҡолаҡлы, ҡыҫҡа ҡойроҡло йәнлек; кролик. *Ҡуян аҫрау. Ҡуян ситлеге. Ҡуян фермаһы.*

◆ **Арба менән ҡуян ҡыуыу** килешмәгән, хилаф эш эшләү. **Атмаған ҡуянға ҡаҙан аҫыу** әле булмаған эште һөйләү. **Ҡуян арба** еңелгә егелә торған ике тәгәрмәсле арба. **Ҡуян йөрәкле** ҡурҡып барған, ҡурҡаҡ. *Ҡуян йөрәкле кеше.* **Ҡуян йылы** мөсәл йыл иҫәбендә дүртенсе йыл (*кар.* **мөсәл**). *Сыскан йылы туклыҡ, ҡуян йылы йотлоҡ булыр.* Һынамыш. **Ҡуян ҡаны кеүек** *йәки* **ҡуян ҡанындай** ҡара-ҡыҙыл төҫтә (сәйгә ҡарата). *Сәйҙәр яһай ҡарсыҡ, ҡалай ҡуйы, ҡып-ҡыҙыл ул, ҡуян ҡанындай.* Ғ. Дәүләтов. **Ҡуян уйыны** түңәрәк һыҙалар; шуның эсендә «ҡуяндар» тора, түңәрәк тышында «бүре» була; йөрөргә сыҡҡан «ҡуяндарҙы» «бүре» баҫтыра, улар кире түңәрәк эсенә инеп ҡотола; тотолған «ҡуян» «бүрегә» әйләнә — урын алмашалар. **Ҡуян ирен**

өҫтән кителеп торған ирен (таумыштан булған зәғифлек). *Ҡуян иренле бала.*

● *Бер йылға ҡуян тиреһе лә һыҙаған.* Мәҡәл. *Ике ҡуянды ҡыуған берҙән тороп ҡалған.* Мәҡәл. *Йүгереп ҡуян ҡыуалар, ултырып аҡыл йыялар.* Әйтем. *Йүнһеҙ һунарсы арба менән ҡуян ҡыуған.* Әйтем. *Ҡомһоҙ эт ҡуян алмаҫ, алһа ла тиреһе ҡалмаҫ.* Мәҡәл. *Ҡуян ул тапкан, ҡуйыр урын тапмаған.* Мәҡәл. *Ҡуян үҙ ҡуләгәһенән ҡурҡыр.* Әйтем. *Ҡуян үлеме ҡамыштан, ир үлеме намыҫтан.* Мәҡәл.

**ҠУЯНҠОЛАҠ** *и.* Оҙон, сәскәһеҙ, йөнтәҫ һабаҡлы сөсө ҡаҡы.

**ҠУЯНСЫ** *и.* **1.** Ҡуян һунарсыһы.

**2.** Йорт ҡуяны аҫрау эшендәге кеше. *Ҡуянсылар бригадаһы.*

**ҠУЯНСЫҠ** *и.* Быума ауырыуының бер төрө.

**ҠУЯНСЫЛАУ** *ҡ.* Ҡуян аулау. *Ҡуянсылап йөрөү.*

**ҠУЯНСЫЛЫҠ** *и.* Ауыл хужалығының ҡуян (3 мәғ.) аҫрау менән шөғөлләнгән тармағы.

**ҠУЯНТУБЫҠ** *и.* Япрағы менән тамыры кишергә оҡшағаныраҡ ашай торған үлән; ҡыр кишере. *Малайҙар аттарын тышап ебәрәләр ҙә, үҙҙәре янтауҙағы ҡатыкка йомолалар. Киске күлем еткәнсә .. ҡаҡы, ҡуҙғалаҡ, ҡуянтубыҡ суплэп ашайҙар.* Ж. Кейекбаев. *Ғәҙебәк тә Насир йөрөгән саҡта ҡуянтубыҡ булды аштары* (Халыҡ йырынан).

**ҠУЯС** *и. диал.* Ҡуянтубыҡ.

**ҠЫБЛА** *и. ҡар.* **ҡибла.**

**ҠЫБЛАМА** *и.* Йүнәлеште күрһәтә торған магнит телле ҡорал; компас. *Бер кемдә машина юҡ, ә муллала ете машина: борос төйә торған машина, ҡыблама, йәғни компас, сәғәт, граммофон һ. б.* Й. Гәрәй.

**ҠЫБЫЛЙЫТЫУ** *ҡ. диал.* Ҡыйырһытыу. *Кешене ҡыбылйытыу.*

**ҠЫБЫЛЙЫУ** *ҡ. диал.* Йымылдау. *Ҡыбылйып күренеү.*

**ҠЫБЫРЛАТЫУ** *ҡ.* Бер аҙ хәрәкәтләндереү, аҙ ғына хәрәкәт иттереү; ҡуҙғатыу, ҡыймылдатыу. *Ҡулды ҡыбырлатыу. Бармаҡтарҙы ҡыбырлатыу.* ■ *Юлдыбикә әбей был юлы ла .. тура ғына уҙып китмәне, иң элек урындыҡ ситенә ултырып иренен ҡыбырлатып, бик оҙаҡ әллә ниҙәр уҡып доға ҡылды.* Т. Хәйбуллин.

♦ **Ҡолаҡ ҡыбырлатҡан мал юҡ** бер ниндәй ҙә мал юҡ тигән мәғәнәлә әйтелә. *Өй булған менән ни — ҡәртәлә ҡолаҡ ҡыбырлатҡан мал юҡ, ашарәсергә лә бөткән* (Әкиәттән). **Ҡыл да ҡыбырлатмау** булған эште эшләмәй тик йөрөү. *[Сәфәр:] Ай, эттәгенәһе, аптырамағыҙсы юҡҡа! Ҡыл да ҡыбырлатмай нисек түҙеп ятмаҡ кәрәк!* Х. Назаров. *Йорт таҙарта бабаһы, утын яра атаһы. Ҡыл да ҡыбырлатмай Мансур, шул да булдымы батыр?!* М. Ғәли.

**ҠЫБЫРЛАУ** *ҡ.* **1.** Һиҙелер-һиҙелмәҫ хәрәкәтләнеү, хәрәкәт яһау; ҡуҙғалыу, ҡыймылдау. *Ҡыбырлап тороу. Ҡыбырламай ултырыу.* ■ *[Айыу] ҡыбырламаһаң теймәй, килеп еҫкәп ҡарай ҙа, үҙ юлына китә.* М. Тажи. / Кәүҙәнең ҡайһы бер ағзалары хәрәкәткә килеү, хәрәкәтләнеү. *Уларҙың аяҡ бармаҡтары көй ыңғайына ҡыбырлап, яурындарын һелкетеп, дәрт даръяһына сумып ултыралар.* Т. Хәйбуллин.

**2.** *күсм.* Эш эшләгәндә, йөрөгәндә хәрәкәтләнеү; ҡуҙғалыу. *Йылдам ҡыбырлау.* ■ *Фәхри эшкә, айырыуса колхоз эшенә, әкренерәк ҡыбырлай торған кеше.* Б. Бикбай.

● *Ҡыбырлаһаң — ҡыр артылыр.* Мәҡәл.

**ҠЫБЫРЛАШЫУ** *ҡ. урт. ҡар.* **ҡыбырлау.** *Гүрстандай гәмле ауылдарҙа ҡыбырлаша йәнле мәйеттәр.* Ш. Бабич.

**ҠЫБЫРСЫҠ** *с. диал.* Түҙемһеҙ. *Ҡыбырсыҡ кеше.*

● *Шаталаҡтың теле уйнар, ҡыбырсыҡтың арты уйнар.* Әйтем.

**ҠЫБЫРСЫНЫУ** *ҡ. диал.* Түҙемһеҙләнеү. *Ҡыбырсынып йөрөү.*

**ҠЫБЫРҺЫУ** *ҡ.* Бер урында сыҙамай, урын тапмай сыпраңлау. *[Алсынбай:] Юҡ менән ҡыялаһың, энекәш. Үҙеңә оя ҡороп, донъя күтәргә кәрәк. [Ҡунаҡбикә:] Әйе шул, тоҡ-томалға ҡыбырһып йөрөргә ни.* Д. Юлтый.

**ҠЫҘ** *и.* **1.** Ҡатын-ҡыҙ енесенән булған бала. *Бер йәшлек ҡыҙ. Еткән ҡыҙ. Һылыу ҡыҙ. // Ҡыҙ саҡ.* ■ *Ике йәшлек тәтелдәк ҡыҙ ине ул Зөлхизә. Хәҙер ун һигеҙ, һай уҙған ғүмер. Үҫте шул ҡыҙ, үҫте. Әйәле-башлы булырға ваҡыт етте.* З. Биишева. *Һыҙып ебәр, егет, гармуныңды, .. таңға ҡалдыр, әйҙә, шәлдәр бәйләп, кис ултырған ауыл ҡыҙҙарын.* Ғ. Мәсғүт. *Егеттәр — ыласын, һылыу — ҡыҙҙарым, балалар — гөлдәр, бик йәш ҡарттарым.* М. Хәй. *[Татлыбикә улына:] Ҡыҙ балаға ҡаты һүгылыу ярамай. Ҡыҙ хаҡы — тәңре хаҡы, тигәндәр боронғолар.* Я. Хамматов. / Кейәүгә сыҡмаған еткән бала. *Еткән ҡыҙҙар уларҙың [рекруттарҙың] йырҙарын тыңлап йоҡламай яттылар. Һуғышҡа китеүселәрҙе йәлләнеләр, сөнки улар менән ҡыҙҙарҙың бәхеттәре, хыялдары бергә китә ине.* Ж. Кейекбаев. **Ҡарт (***йәки* **ултырған) ҡыҙ** йәше еткәнсе кейәүгә сыға алмай ултырған ҡыҙ.

**2.** Ата-әсәнең ҡатын-ҡыҙ енесенән булған балаһы. *Гәрәй ир етеп килгән саҡтарҙа Мисбах ҡарттың өс ҡыҙы ла кейәүгә киткәйне инде. Ҡатыны ҡыҙҙарының башлы-күҙле булыуына шатланып бөтә алманы.* Б. Бикбай. / *юғары* Иленең, туған халҡының ҡатын-ҡыҙ енесенән булған тоғро вәкиле. *Башҡортостан ҡыҙы.* ■ *Аҡ ебәктәй йомшаҡ тауыштарың Урал ҡыҙы ҡушып йырланы.* Х. Ғәбитов. *Ил-әсәнең һин һөйөклө ҡыҙы, күҙ алдында үҫтең донъяның. Яҙмышыңа нисек һоҡланмайһың, Башҡортостан — Бәхетстаным.* «Башҡортостан ҡыҙы», 1971, № 3.

**3.** Кейәүгә бирелгән еткән бала. *Сеңләү, ғәҙәттә, кейәүгә оҙатылыусы ҡыҙҙың ата-әсәһе, туғандары менән хушлашыу ваҡытында башҡарыла.* М. Сәғитов.

**4.** (*баш хәреф менән*) *астр.* Зодиактың береһе (Арыҫлан менән Үлсәү йондоҙлоҡтары уртаһында урынлашҡан).

♦ **Ейән ҡыҙ** сит ауылға иргә сыҡҡан ҡатындың ҡыҙы (әсәһенең ауылдаштары өсөн). **Ҡыҙ алыу** килен төшөрөү. **Ҡыҙ биреү** ҡыҙыңды кейәүгә биреү. **Ҡыҙҙар уйыны** яҙ көнө ҡырға сығып, ашарға бешереп, күңел аса торған ҡатын-ҡыҙ уйыны; ҡарға бутҡаһы. **Ҡыҙ инсеһе** килен булып

төшкән ҡыҙҙың кейәү йортона алып барған инсе малы. **Ҡыҙ йәрәшеү** *диал.* ҡыҙ килешеү. **Ҡыҙ йәшереү** *этн.* егеткә ҡушыр алдан ҡыҙҙы йәшергән булып эҙләтеү, бүләк биреп еңгәләренән таптырыу. *Ҡыҙ йәшереү бер Хәнәнән ҡалған йола түгел, ата-баба йолаһы. Кәләш кәрәк булһа, табыр әле.* М. Буранғолов. **Ҡыҙ килешеү** ата йортонда ҡыҙҙы бирергә (йәки алырға) булып, үҙенең ризалығын алып, үҙ-ара һөйләшеп килешеү. **Ҡыҙ күҙләү** һайлап алыу өсөн ҡыҙ ҡарау. **Ҡыҙ күсереү** әйттерелгән ҡыҙҙы егет йортона килтереү, килен төшөрөү. **Ҡыҙ ҡотой** ҡыҙҙар араһында йөрөүсән, ҡыҙҙар менән бергә уйнарға әүәҫ малай. **Ҡыҙ ҡушыу** егет менән ҡыҙҙы ҡауыштырыу. *Ҡыҙ бер ергә йәшенә. Уны еңгәләре .. эҙләп табалар ҙа, ҡыҙ ҡуша торған аулаҡ өйгә алып баралар.* М. Буранғолов. **Ҡыҙ оҙатыу** кейәүләп йөрөгәндән һуң ҡыҙҙы егет йортона оҙатыу. **Ҡыҙ тәкә** 1) ике енесле кеше; хөнәсә; 2) ҡыҙ ҡотой. **Ҡыҙ һоратыу** *ҡар.* **ҡыҙ әйттереү. Ҡыҙ әйттереү** килешеү өсөн ҡыҙҙың ата-әсәһенә яусы ебәреү. **Морондоҡ ҡыҙ** йола буйынса, морондоҡ әсәгә ҡыҙ итеп яһап алынған ситтән төшкән килен кеше; ҡиәмәтлек ҡыҙ; үкел ҡыҙ. **Хур ҡыҙы** 1) дини ҡарашса, ожмахтағы гөнаһһыҙ ҡыҙ; 2) бик һылыу, инсафлы ҡыҙ.

● *Атанан тыумай ул булмаҫ, инәнән тыумай ҡыҙ булмаҫ.* Мәҡәл. *Атаһына ҡарап улын ҡос, инәһенә ҡарап ҡыҙын ҡос.* Әйтем. *Боҙ башына боҙ етә, ҡыҙ башына ҡыҙ етә.* Мәҡәл. *Бохар даны менән буҙ итер, ата даны менән ҡыҙ үтер.* Мәҡәл. *Ебенә күрә буяуы, ҡыҙына күрә кейәүе.* Әйтем. *Кейәүгә китәһе ҡыҙҙан бумала ла ҡурҡыр.* Әйтем. *Ҡыҙ буй етһә ҡуҙгә сөйәл.* Мәҡәл. *Ҡыҙҙың күҙе ҡыҙылда.* Әйтем. *Ҡыҙ инәһе ҡырҡ булыр, ҡырҡ беренсеһе сыбыҡ булыр.* Әйтем. *Ҡыҙлы өйгә ҡырҡ ат бәйләнер.* Әйтем. *Ҡыҙ намыҫы ҡыл өҫтөндә, ҡылдан төшһә — ил өҫтөндә.* Мәҡәл. *Ун алтыла ҡыҙ — солтан, ун етелә — сулпан, егермелә — гөлбостан, егерме берҙә — суртан.* Мәҡәл.

**ҠЫҘАМЫҠ**[1] *и.* **1.** Тәнгә ваҡ ҡына алһыу һипкелдәр сығып, эҙ генә температура күтәрелеп, ике-өс көндән үтә торған йоғошло балалар ауырыуы. *Ҡыҙамыҡ менән ауырыу.*

**2.** *диал. ҡар.* **ҡыҙылса**[1].

**ҠЫҘАМЫҠ**[2] *и. диал.* Ҡыҙыл шәшке (*ҡар.* **шәшке**[1]).

**ҠЫҘАРТЫУ** *к.* **1.** Ҡыҙыл төҫкә индереү; ҡыҙыл итеү. *Ана шул ҡуйы ҡыуаҡлыҡ артына, офоҡто ҡыҙартып, ҡояш байый.* С. Агиш. / Ҡыҙылға буяу. *Ҡатын-ҡыҙҙар пудра яҡҡан, һөрмә тартҡан, ирен ҡыҙартҡан.* А. Таһиров.

**2.** Уңайһыҙлыҡ хисе уятыу; оялтыу. *Йөҙҙө ҡыҙартыу.* ■ *Салих текләп ҡарап, Соняны ҡыҙарта.* Б. Ишемғол.

● *Үҙ бите оялмаған кеше битен ҡыҙартҡан.* Әйтем. *Ҡыҙартмайым тиһәң йөҙөңдө, әнә күҙенән үткәр һәр һүҙеңде.* Әйтем.

**ҠЫҘАРЫНЫП-БҮРТЕНЕҮ** *к. һөйл.* Ҡыпҡыҙыл булып бүртенеү. *Сәғиҙә ни тип әйтергә лә белмәй, ҡыҙарынып-бүртенде.* М. Тажи. *Ҡыҙарынып-бүртенеп, ҡаҙан тирәһендә бешеренеп йөрөгән Хәйерниса еңгә, һис көтмәгәндә Сабирҙың килеп инеүен күргәс, аптырап китте.* Д. Исламов.

**ҠЫҘАРЫНЫУ** *к.* **1.** Ҡан йүгереп, ҡыҙыл булыу; йөҙгә ҡыҙыллыҡ йүгереү. *Һүҙемдең урынһыҙ булыуына уңайһыҙландым, ҡыҙарындым.* Д. Юлтый.

**ҠЫҘАРЫУ** *к.* **1.** Ҡыҙыл төҫкә инеү, ҡыҙыл булыу. *Ҡыҙарып таң ата.* ■ *Ҡыҙарып ҡалҡҡан ҡояшты һайрап ҡаршылай ҡоштарың.* Салауат Юлаев. / Ҡан һауып йәки ҡан йүгереп, ҡыҙыл булыу. *Асыуҙан ҡыҙарыу. Бурлаттай ҡыҙарыу. Ҡыҙарып янып тороу. Уттай ҡыҙарыу.* ■ *Зәйнәп менән Сәйҙел был һүҙҙәрҙән ятып ҡыҙарғанса көлдөләр.* Ғ. Сәләм. / Өлгөрөп бешеү, ҡыҙыл төҫкә инеү. *Ҡыҙарып бешеү.* ■ *Ҡурай еләге ҡыуаҡта ҡыҙара, сирень сәскә ата, көн көлә.* М. Хәй. *Бейек тауҙа сейә булһам, ҡыҙарып бешер инем* (Халыҡ йырынан).

**2.** Уңайһыҙланып, оялып, ҡыҙыл булыу. *Йөҙ ҡыҙара. Оялып ҡыҙарыу.* ■ *Хаят ҡыҙарып башын түбән эйҙе, ни тип әйтергә лә оялды.* Һ. Дәүләтшина. *Бәгерем, тиһәм, яҙыҡ булыр ине, үҙем яҙам, үҙем ҡыҙарам.* Х. Ғиләжев. *Үҙе оялған була ул, үҙе ҡыҙарған була, иртән торһа, кәрзин тағып, ҡабат баҙарға сыға.* Т. Арслан.

◆ **Ҡан ҡыҙарыу** ҡан төҫөнә инеү. *Ҡан ҡыҙарҙы бөтә һыу өҫтө.* Т. Арслан. **Ҡыҙара бүртеү** ҡанға тулышып ҡыҙарыу. **Таң ҡыҙарыу** таң беленеү. *Таң ҡыҙарыу түгел, ҡояш сыҡһын, танһыҡтарым ҡанмай ҡайтмайым* (Халыҡ йырынан).

**ҠЫҘАРЫШЫУ** *к. урт. ҡар.* **ҡыҙарыу.** *Ҡыҙарышҡан йылға ҡамыштары башын эйеп тора, тын алмай, ҡыҙара ер, өс «икеле» алған Тәлгәт үҙе генә ҡыҙармай.* Т. Арслан.

**ҠЫҘАУ** [*рус.* кузов] *и.* Ҡабыҡтан яһалған ҡул кәрзине; тубал. *Тугыҙаҡ әбей туғыҙ улына туғыҙ йүкә ҡыҙау биреп урманға ебәрҙе, ти.* «Ек мәргән».

**ҠЫҘАШ** *и.* Ут ҡулланмай тимерҙән сүкеп төрлө нәмә эшләү оҫтаһы; һыуыҡ тимерсе. *Бөтә йәйләү буйында һаҙаҡ һуғып ҡыҙаштар Урал буйын шаңғыратты.* М. Буранғолов. *Батша башҡорттарға тимерлектәр ҡороуҙы тыйғас, ҡыҙаштар — һыуыҡ тимерселәр генә ҡалған.* Ғ. Хөсәйенов.

**ҠЫҘҒАНДЫРЫУ** *к. әйҙ. ф. ҡар.* **ҡыҙғаныу.** *Нәмәне сит кешегә бирергә ҡыҙғандыра.*

**ҠЫҘҒАНСЫҠ** *с.* **1.** Көнләшкән, көнсөл. *Ҡыҙғансыҡ ҡатын. Ҡыҙғансыҡ булыу.*

**2.** Кешенән нәмәһен ҡыҙғанған; һаран. *Ҡыҙғансыҡ кеше.*

● *Ҡыҙғансыҡтың ашы ҡарынды ауырттырыр.* Әйтем.

**ҠЫҘҒАНЫС** *с.* **1.** Йәлләү тойғоһо уятҡан, йөрәк әрнеткес. *Ҡыҙғаныс кеше.* ■ *Илайым тик ярлы, меҫкен, ҡыҙғаныс халҡым өсөн.* Ш. Бабич.

**2.** Үкенеү тойғоһо уятҡыс, үкенесле. *Ҡыҙғаныс хәл.* ■ *[Сәгиҙә:] Алдынғыларҙан һаналып килгән минең класым бер нисә көн эсендә генә шундай хәлдә ҡалғанмы ни? Ғәжәп һәм бик ҡыҙғаныс һүҙ ишетәм мин һеҙҙән.* М. Тажи.

**3.** (*йәки* **ҡыҙғанысҡа ҡаршы**) *инш. мәг.* Нимәгәлер үкенес белдергәндә әйтелә. *[Ҡадир:] Ҡыҙ-*

*ғаныс, шул саҡта мин дә булмағанмын.* Б. Бикбай.

**ҠЫҘҒАНЫСЛЫ** *с.* **1.** Үкенеү тойғоһо уятҡыс; үкенесле. *Ҡыҙғаныслы тормош.*

**2.** Ауыр кисерештәр уятҡан, фажиғәле. *Ҡыҙғаныслы хәл.*

**ҠЫҘҒАНЫУ** *ҡ.* **1.** Ауыр хәлдә күреп, аяп, әсенеү; йәлләү. *Анау сыр-ялангас торған кәртәләге малды ла әҙерәк ҡыҙғанырға кәрәк.* Т. Йәнәби. *Рәхим, шәфҡәт күрһәт, ҡыҙған, бабай! Туңам, индер йылы торлаҡҡа.* Ғ. Амантай. *Күҙҙәрем алдында илап, ярлы меҫкендәр үтә, ярлыларҙы ҡыҙғаныуҙар йәш күңелдә әрнетә.* Ш. Бабич. *Бел: дошманды ҡыҙғаныу юк һис күңелдә,— һунарсылай йәнен ҡый һин, батыр улым.* Р. Ниғмәти.

**2.** Ҡулдан ебәрергә, бирергә йәл күреү; йәлләү. *Аҡсаны ҡыҙғаныу. Донъя малын ҡыҙғаныу. Көстө ҡыҙғаныу.* ■ *Сәйҙел ҡыҙғанманы, аҡса тапты, курортҡа путёвка булдырҙы.* Ғ. Сәләм. *Атаҡайым мине һаталыр, әсе икмәген ҡыҙғаныр* (Сеңләүҙән).

**3.** *диал. ҡар.* **көнләшеү** 1. *Ҡыҙғанмай ҙа, көнләшмәй ҙә, баҡһаң, яратмай икән* (Халыҡ йырынан).

● *Ат тояғын ҡыҙғанған ылауҙан ҡотолмаҫ.* Әйтем. *Ҡыҙғанғанды ҡыҙыл эт ашаған.* Мәҡәл. *Тәңре ашын шайтан ҡыҙғанған.* Мәҡәл.

**ҠЫҘҒАНЫШЫУ** *ҡ. урт. ҡар.* **ҡыҙғаныу** 1. *Ҡыҙғаныишп илау.*

**ҠЫҘҒАТАУ** *и.* Көйөлдө һымаҡтар ғаиләһенә ҡараған мөгөҙ һымаҡ супайлы, оҙон моронло, оҙон аяҡлы, ҡара һор төҫлө һаҙ ҡошо. *Ҡыҙғатау тауышы. Ҡыҙғатау ояһы.* ■ *Тау битләүендәге туғайҙа .. ҡыр өйрәктәре, ҡыҙғатау, тәгәрлектәр осоп йөрөй.* С. Агиш.

**ҠЫҘҒЫЛТ** *с.* Ҡыҙылға тартым. *Ҡыҙғылт нур. Ҡыҙғылт саң. Ҡыҙғылт һары.*

**ҠЫҘҒЫЛТЛАНЫУ** *ҡ.* Ҡыҙғылт төҫкә инеү; ҡыҙғылт булыу. *Ҡыҙ пристандең бер ситендә ҡояш нурына ҡыҙғылтланған диңгеҙгә ҡарап тора.* С. Агиш.

**ҠЫҘҘАР** *и.* Ҡәйен һеңле (иренең һеңлеһе).

**ҠЫҘҘЫРҒЫС** *с.* Дауалау маҡсаты менән ауыртҡан ергә һалынған дарыулы йәки йылы сепрәк; боҫлама, компресс. *Билгә ҡыҙҙырғыс һалыу.*

**ҠЫҘҘЫРМАС** *и.* Төйөлгән картуфҡа ҡыҙҙырылған он һалып бешергән ашамлыҡ. *Ҡыҙҙырмас бешереү.*

**ҠЫҘҘЫРТЫУ** *ҡ. йөкм. ҡар.* **ҡыҙҙырыу.** *Ит ҡыҙҙыртыу. Ҡурмас ҡыҙҙыртыу.*

**ҠЫҘҘЫРЫЛЫУ** *ҡ. төш. ҡар.* **ҡыҙҙырыу.** *Ҡыҙҙырылған балыҡ.*

**ҠЫҘҘЫРЫУ** *ҡ.* **1.** Утта эҫетеү, эҫе итеү. *Мейесте ҡыҙҙырыу. Табаны ҡыҙҙырыу. Тимерҙе ҡыҙҙырыу.* ■ *Ҡыҙрас уртансы кейәүҙең арҡаһына балдаҡ ҡыҙҙырып баҫа* (Әкиәттән)./ Ашамлыҡты һыуһыҙ һауыт менән утҡа тотоу, ҡурыу. *Ит ҡыҙҙырыу. Ҡурмас ҡыҙҙырыу.* ■ *Кинйәбикә .. башаҡты йыйып, ҡыҙҙырып, килелә төйөп, бутҡа бешерҙе.* Ж. Кейекбаев.

**2.** Ҡояшҡа, эҫегә йылытыу. *Мейескә арҡаны ҡыҙҙырыу.* ■ *Бына әле лә әбей тубыҡ быуындарын яҙғы ҡояш нурында ҡыҙҙырып ултыра.* Ғ. Шәрипов.

**3.** Бик ныҡ эҫетеү; яндырыу. *Көн ҡыҙҙыра.* ■ *Ҡояш ҡыҙҙыра. Урман аралап барған юлда бөркөү, исмаһам, әҙ генә лә ел иҫмәй.* Д. Юлтый. *Аяҡ аҫтындағы ҡырсын табанды ҡыҙҙыра.* З. Биишева. / Тәнде яндырыу, тән эҫелеге күтәрелеү. *Өшөү үтеп, ҡыҙҙыра башлағас, Емешкә тағы ла ауырыраҡ булды. Башы сатнаны. Тыны быуылды.* З. Биишева.

**4.** *күсм.* Нервыны ҡуҙғатып, ярһытыу. *Ҡанды ҡыҙҙырыу. Юҡты-барҙы һөйләп атайыңды ҡыҙҙырма.*

**5.** *күсм. һөйл.* Эшкә ебәреү (моторҙы); тоҡандырыу. *Машинаны ҡыҙҙырыу.* ■ *Ҡустым, ҡыҙҙыр машинаңды! — тип, теге шофёрға бойороуҙан да тартынманы.* Ф. Иҫәнғолов.

**6.** *күсм.* Ныҡ итеп орошоу; әрләү. *Бер көн уҡырға бармай ҡалһаң, Басареев беҙҙе ҡыҙҙыра торғайны.* Ш. Насыров.

◆ **Бауырын ҡыҙҙырыу** ҡыҙыу хәрәкәт менән ярһытыу. *Егет саптырып йөрөп, толпарҙың бауырын ҡыҙҙырып ала ла, ҡапҡа аша ырғып, күҙҙән юғала* (Әкиәттән). **Күҙҙе ҡыҙҙырыу** *ҡар.* **күҙ. Ҡанды ҡыҙҙырыу** *ҡар.* **ҡан** [1].

**ҠЫҘ-ҠАТЫН** *и. йыйн. ҡар.* **ҡатын-ҡыҙ.**

**ҠЫҘ-ҠОРАТ** *и. диал.* Ҡыҙ-ҡырҡын.

**ҠЫҘ-ҠЫРҠЫН** *и. йыйн.* Ҡыҙҙар. *Һеҙҙе маҡтап йырлар, ҡаҙ өмәһе яһар ҡыҙ-ҡырҡын.* Ш. Бабич. *Тауға сыҡҡан ҡыҙ-ҡырҡын эркелеп, барыһы ла ташҡан һыуҙай тулҡынып, һандуғастай һайрашалар елкенеп* (Халыҡ йырынан).

**ҠЫҘЛАЙ** *р.* Ҡыҙ көйө; ҡыҙлата. *Ҡыҙлай алыу.*

**ҠЫҘЛАТА** *р.* Ҡыҙ көйө; ҡыҙлай.

● *Ҡарт булһа ла, ҡыҙлата ал.* Әйтем.

**ҠЫҘЛЫҠ** *и.* **1.** Ҡыҙ булып йәшәгән ваҡыт; ҡыҙ баланың кейәүгә сыҡҡанға тиклемге ваҡыты. *Ҡыҙлыҡ дәүере.* ■ *Ләкин Йәмилә, бисара, яңы ғына ҡыҙлыҡ донъяһынан сығып, ҡатын булған, үҙен-үҙе түйҙырып, яңғыҙ тороп өйрәнмәгән.* М. Ғафури.

**2.** Ҡыҙ сафлығын билдәләгән яры; ғиффәт. *Ҡыҙ кешегә тәүге никах төнөнән һуң 3-5 көн буйы енси бәйләнеш ғыйыла: ҡыҙлыҡ пәрҙәһендәге ярағa микробтар инеүе ихтимал.* В. Ғүмәров.

**ҠЫҘМА** *с.* **1.** *ҡар.* **ҡыҙмалы.** *Ҡыҙма кеше. Ҡыҙма булыу.*

**2.** *ҡар.* **ҡыҙмаса.** *Ҡыҙма булыу.* ■ *Камил һуңғы көндәрҙә, Зинүнәне осратмаҫ өсөн, Нисаларға килмәй башланы. Бөгөн дә [ул] Нисаларға ҡыҙма баш менән генә килеп инде.* Ә. Вәли.

**ҠЫҘМАЛАНЫУ** *ҡ.* Ҡыҙыулыҡ күрһәтеү, ҡыҙыу холоҡло булыу.

**ҠЫҘМАЛЫ** *с.* Тиҙ ҡыҙып китеүсән, ҡыҙыу холоҡло; ҡыҙма. *Ҡыҙмалы кеше. Ҡыҙмалы булыу.*

**ҠЫҘМАСА** *с.* Бер аҙ эсеп, ҡыҙып алған. *Ҡыҙмаса булыу. Ҡыҙмаса кеше.* ■ *Ҡыҙмаса баштан берәүҙе кисә хаҡһыҙ маҡтаным, иртән торғас, үҙ-үҙемә бер аҡланыу тапманым.* М. Кәрим.

**ҠЫҘМАСАЛАНЫУ** *ҡ.* Ҡыҙмаса хәлгә килеү. *Ҡымыҙ эсеп ҡыҙмасаланыу.*

**ҠЫҘМАЙ** *с. диал. кар.* **ҡыҙма 1.** *Ҡыҙмый кеше.*

**ҠЫҘНАУ** *к. диал.* Әсеп, бызырлау; ғызлау.— *Ана, ҡымыҙығыҙ ҡыҙнап ултыра, йышырак бешегеҙ, әйттереп тормағыҙ.* Һ. Дәүләтшина.

**ҠЫҘРАС** *с. иҫк.* Ҡыҙыу холоҡло, ҡыҙыу тәбиғәтле. *Ҡыҙрас кеше.*

**ҠЫҘРАТАУ** *и. диал.* Ҡыҙғатау. *Ҡыҙратау ояһы. Ҡыҙратау йоморҡаһы.*

**ҠЫҘРАУ** *с. кар.* **ҡыҙыу** [2] 4.

**ҠЫҘЫҒАЙТЫУ** *к.* Ҡыҙыҡҡа әйләндереү, ҡыҙыҡ итеү. *Кисәне ҡыҙығайтып ебәрҙе.*

**ҠЫҘЫҒАЙЫУ** *к.* Ҡыҙыҡҡа әйләнеү, ҡыҙыҡ булыу. *Йәйгелеккә йәштәр ҡайтты, ауылда эш ҡыҙығайҙы.*

**ҠЫҘЫҒЫУ** (ҡыҙыҡ*г*) *к.* **1.** Күңел биреү, әүрәү; мауығыу. *Ҡыҙығып тыңлау. Ҡыҙығып уҡыу. Ҡыҙығып ҡарап тороу.* ■ *Үткер йәштәрҙең ҡайһы берҙәре бындай прокламацияларҙы тотош ятлап алып, уны ҡыҙығып тыңлаған иптәштәренә лә, ололарға ла һөйләйҙәр ине.* Һ. Дәүләтшина.

**2.** Күңел биреп, һоҡланып, йөрәкһеү.— *Тансаға бик ҡыҙығып ултырам да, мөмкин түгел бит әле.* Д. Юлтый. *Был ҡыҙ егеттең батырлығына, матурлығына бик ҡыҙыға* (Әкиәттән). *Мөмкинме ҡыҙыҡ йырға ҡыҙыҡмаҫҡа, моңланып моңло көйгә бойоҡмаҫҡа.* Ш. Бабич. *Уралҡайҙың аҫты алтын, өҫтө шигыр, үҙе нур; киләсәктә был ергә хоҙай үҙе ҡыҙығыр.* Ш. Бабич.

**3.** Иимәнелер үҙеңдә булдырыу йәки нимәгәлер эйә булыу теләге уяныу. *Аҡсаға ҡыҙығыу. Түрәлеккә ҡыҙығыу.* ■ *Донъя малдарына ҡыҙыҡманым, ҡыҙыҡманым еңел табышҡа.* А. Игебаев.

● *Иҫәр ҡыҙығыр матурға, аҡыллы — батырға.* Әйтем. *Ҡыҙ тип ҡыҙыҡма, ҡәйнә ҡыҙҙан ярала.* Әйтем.

**ҠЫҘЫЙ** *и.* Ҡыҙ кешегә өндәшеү һүҙе.— *нихәл, ҡыҙый, шәпме? — тине Шаҡир, Зөһрәнең алдына туҡтаны.* Ғ. Хәйри.

**ҠЫҘЫҠ** *с.* **1.** Көлкө килтергес, мәрәкә. *Ҡыҙыҡ ваҡиға. Ҡыҙыҡ хәбәр. Ҡыҙыҡ хәл. Ҡыҙыҡ һүҙ. Ҡыҙыҡ табыу. Ҡыҙыҡ булыу. Ҡыҙыҡ итеп һөйләү.* // *Ҡыҙыҡҡа һанау.* ■ *Шуныһы ҡыҙыҡ бына, ха-ха-ха: йүгереп йөрөгән бәләкәй малайҙар, тубыҡ тиңе кулдәк кейгәндәр, бот буйҙары асыҡ, ыштан юҡ.* Ғ. Амантай. *Үткән көндө улар хәтерләйҙәр, йәшлек ҡыҙыҡтарың һөйләйҙәр.* Ғ. Сәләм.

**2.** Күңел әүрәткес; ирмәк. *Ҡыҙыҡ китап. Ҡыҙыҡ тамаша. Ҡыҙыҡ уйын. Ҡыҙыҡ эш. Ҡыҙыҡ итеп йәшәү.* // *Ҡыҙығын табыу.* ■ *Йәш күңел бит инде, миңә тәү башлап ҡаласа барыу ҙа бик ҡыҙыҡ булып тойолдо.* Т. Йәнәби. *Әгәр һәр саҡ татлы булһа, ни ҡыҙығы булыр донъяның.* М. Хәй.

**3.** Ғәҙәттән тыш, аптырарлыҡ, ғәжәп. *Ҡыҙыҡ кеше.* ■ *[Дилә:] Әсәй, Ныязгол олатайым әллә ниндәй бер ҡыҙыҡ машина алып ҡайтып ултырттан.* Һ. Дәүләтшина. *Өс көн үткән, биш көн үткән, ете көн үткән, бай һаман бер ҙә эш ҡушмай, ти. Ҡыҙыҡ бай икән был, тип уйлаған, ти, Оморҙаҡ* (Әкиәттән).

**4.** *инш. мәг.* Һөйләүсенең ғәжәпләнеүен белдерә.— *Ҡыҙыҡ, ниңә һеҙ минең теш менән ҡыҙыҡһынаһығыҙ?* С. Агиш.

□ **Ҡыҙыҡ итеү** көлкө хәлгә ҡалдырыу. *Түҙемголдоң иптәштәре зиндандағы тоткондарҙы ирекҡә сығарған, ә дейеүҙең үҙен ҡыҙыҡ итергә булған, ти* (Әкиәттән). **Ҡыҙыҡ күреү** ҡыҙыҡҡа һанау.

**ҠЫҘЫҠАЙ** *и.* **1.** Ҡыҙ кешегә кесерәйтеп йәки иркәләтеп әйтеү һүҙе.

**2.** Таныш булмаған ҡыҙҙы белдереү һүҙе. *Урамдан бер ҡыҙыҡай килә.*

**ҠЫҘЫҠАС** *и. кар.* **ҡыҙыҡай.**

**ҠЫҘЫҠЛАНЫУ** *к. кар.* **ҡыҙығайыу.**

**ҠЫҘЫҠЛЫ** *с.* **1.** Көлкө килтергес; ҡыҙыҡ, мәрәкә. *Ул [Индрил] ҡыҙыҡлы анекдоттар һөйләп төнгә тиклем беҙҙе көлдөрҙө.* Д. Юлтый.

**2.** Күңел биләгес; мауыҡтырғыс, ҡыҙыҡ. *Ҡыҙыҡлы асыш. Ҡыҙыҡлы уйын. Ҡыҙыҡлы әкиәт.* ■ *Күмәк кеше бергә эшләгәндә, әллә ни эшләп эш үҙе лә ҡыҙыҡлы була бит ул.* Ғ. Дәүләтшин.

**ҠЫҘЫҠТЫРҒЫС** *с.* Күңел биләгес, күңел әүрәткес; ҡыҙыҡлы. *Ҡыҙыҡтырғыс хәл.*

**ҠЫҘЫҠТЫРЫУ** *к.* **1.** Ҡыҙығыу тойғоһо уятыу. *Китап менән ҡыҙыҡтырыу. Эш менән ҡыҙыҡтырыу.*

**2.** Күңелде тартыу, күңелде йәлеп итеү; ҡыҙыҡһындырыу. *Ҡыҙарып ултырған алмалар беҙҙе хәҙер башҡа ваҡыттағы кеүек ҡыҙыҡтырмай.* Д. Юлтый.

**3.** Күңелде тартыу, һоҡландырыу. *Хәҙер ни өсөндөр һис кенә лә ҡыҙыҡтырмай мине һылыуҙар.* А. Игебаев.

◆ **Матди яҡтан ҡыҙыҡтырыу** өҫтәмә хаҡ кеүек нәмә менән эшкә ихласландырыу; эшләү дәрте уятыу.

**ҠЫҘЫҠҺЫҘ** *с.* Иғтибарҙы тарта, күңелде әүрәтә алмаҫлыҡ. *Йондоҙом өмөтһөҙ, күҙ илай өҙләкһеҙ, ҡаҙалһын донъяһы — күңелгә ҡыҙыкһыҙ.* Ш. Бабич. *Ата кеше һаҡал һәм мыйыкһыҙ, әллә нисек, бер ҙә ҡыҙыҡһыҙ.* М. Тажи.

**ҠЫҘЫҠҺЫНДЫРЫУ** *к.* **1.** Ҡыҙыҡһыныу тойғоһо уятыу. *Эш менән ҡыҙыҡһындырыу.*

**2.** Күңелде, иғтибарҙы тартыу. *Беҙҙең урман хазинаһы был байҙы бик нык ҡыҙыҡһындыра.* Д. Исламов.

◆ **Материаль яҡтан ҡыҙыҡһындырыу** *шул уҡ* **матди яҡтан ҡыҙыҡтырыу** (*кар.* **ҡыҙыҡтырыу**).

**ҠЫҘЫҠҺЫНЫУ** *к.* **1.** Мөһим күреп, ҡыҙыҡ һанап, иғтибарҙы, күңелде бәйләү; мауығыу. *Эш менән ҡыҙыҡһыныу. Халыҡ ижады менән ҡыҙыҡһыныу.*

**2.** Нимәнелер белергә, уның айышына төшөргә тырышыу. *Утыҙ-утыҙ биш йәштәрҙәге иптәш .. Сәгиҙәнең тормошо, үткән юлы менән ҡыҙыҡһынды.* М. Тажи. *Сыртланов ағай ҡыҙыҡһына төштө: «Тукта әле, һин, мырҙам, рәтләп һөйлә. Нисек инде һеҙ ике кеше?»* С. Агиш. *Беҙҙең мәктәптә шахмат буйынса ярыш уҙғарырға булдылар. Был ҙур ҡыҙыҡһыныу тыуҙырҙы.* З. Хисмәтуллин. *Трактор яҡынлашҡан һайын Әхмәттең ҡыҙыҡһыныуы артты.* М. Ғафури.

**ҠЫҘЫҠҺЫНЫУСАН** *с.* Һәр нәмә менән ҡыҙыҡһыныу ғәҙәте булған; нимәнелер белергә тырышҡан. *Ҡарабайҙың ҡыҙыҡһыныусан ауылдаштары таң атыр-атмаҫтан уҡ уның тирмәһе*

янына йыйылып, йоҡоһонан уяныуын көтәләр. «Ҡуҙыйкүрпәс менән Маянһылыу».

**ҠЫҘЫҠҺЫНЫУСАНЛЫҠ** *и.* Ҡыҙыҡһыныусан булыу. *Шуға күрә Фатима шикләнәп түгел, бәлки, ҡатын-ҡыҙҙарға хас үтә ҡыҙыҡһыныусанлыҡ тойғоһона бирелеп, һөйгәне артынан күҙәтергә булды.* Б. Бикбай.

**ҠЫҘЫЛ** [1] *с.* **1.** Спектрҙағы төп төҫтәрҙең береһе; ҡан төҫөндәге. *Ҡыҙыл байраҡ. Ҡыҙыл күлдәк. Ҡыҙыл таҫма. Ҡыҙыл яулыҡ.* ■ *Ал, ҡыҙыл, зәңгәр сәскәләр күҙҙәрҙе ялмап тора; мөлдөрәп ятҡан күлдәрҙә балыҡтар уйнап тора.* Р. Ниғмәти. *Күк күгәрсен тигән ҡошҡайҙың аяҡтары ҡыҙыл, үҙе күк* (Халыҡ йырынан).

**2.** Үҫемлек, йәнлек һәм ҡайһы бер минерал атамаларҙың аныҡлаусыһы булып килә. *Ҡыҙыл бөрлөгән. Ҡыҙыл көртмәле. Ҡыҙыл ҡарағат. Ҡыҙыл тал. Ҡыҙыл төлкө. Ҡыҙыл яҡут.* ■ *Беҙ уҡыған заманда бойҙай, һоло, тары, арыш культуралары ғына бар, уларҙың да сорттары ҡыҙыл башаҡ менән ҡылсыҡлы бойҙайҙан уҙмай ине.* Н. Ҡәрип. / Ҡатмарлы төҫ атамаларының бер өлөшө булып килә. *Бурлат ҡыҙыл. Ҡара ҡыҙыл. Ҡыҙыл күк. Ҡыҙыл һары. Сейә ҡыҙыл. Ҡыҙыл күк ат.* ■ *Аш артынан ҡорот иҙеп ҡатылған, ҡара борос һалынған һурпа бирелде. Унан һуң [ҡунаҡтар] ҡуян ҡаныңдай ҡара ҡыҙыл итеп бешерелгән сәй эстеләр.* Б. Бикбай.

**3.** *күсм.* Революцион көрәшкә, Совет короло шо һәм Ҡыҙыл Армияға бәйләнешле, революция яҡлы. *Ҡыҙыл партизандар. Ҡыҙыл офицерҙар.* ■ *Әҙерләймен алғы көндәр өсөн көрәшселәр — ҡыҙыл батырҙар!* Ғ. Амантай. / *и. мәғ.* **ҡыҙылдар** Революцион ғәскәр. *Ҡыҙылдарға ҡушылыу.* ■ *Яҙғы бер төндә ауылға ҡыҙылдар килеп ингән. Аҡтар уларҙы бөтөнләй көтмәгән булғандар. Шуға күрә мунса инеп ятҡандары хатта шәрә көйҙәренә ҡасырға мәжбүр булғандар.* Р. Ғабдрахманов. *Беҙ ҡушылдыҡ хәҙер ҡыҙылдарға, беҙҙең өсөн лайыҡ шул булғас.* Ш. Бабич.

♦ **Ҡыҙыл араҡы** виноградтың ҡара сортынан яһалған араҡы. *Новиков еврейҙар араһына барып, ҡайҙандыр, ниндәй юл менәндер бер сирек ҡыҙыл араҡы табып килгән.* Д. Юлтый. **Ҡыҙыл Армия** Совет Армияһының 1918 йылдан 1946 йылға тиклем булған исеме. *Айбулат был һуңғы айҙарҙа Ҡыҙыл Армияның Орёл, Воронеж ҡалалары янында Деникиндың ҡаты ҡаршылығын еңеп, уны емереп ҡыуғанын хәтерләй.* З. Биишева. **Ҡыҙыл мал** *иҫк.* туҡыма, мануфактура. *Зариф бай ҡыҙыл мал менән һатыу итә ине.* Ғ. Ғүмәр. **Ҡыҙыл туй** яңы йолалар менән үткәрелгән туй. *Һәр көҙ һайын шаулап үтә был ауылда ҙур байрамдар, мәжлестәр, ҡыҙыл туйҙар.* М. Сөндөклө. **Ҡыҙыл эремсек** эрегән һөттө ҡыҙартҡансы ҡайнатып яһаған ашамлыҡ. *[Табибә:] — Асыҡҡанда, ҡоҙаса, ҡапҡыларһың,— тип, ҡорот, ҡаҡ, ҡыҙыл эремсек һалып, төйонсөк әҙерләне.* З. Биишева. **Ҡыҙыл этәс ҡуныу** ут сығып яныу. *Берҙән-бер көндө Асанбайҙың яҙмышын улар [халыҡ] үҙҙәре хәл итә. Уның мөлкәтенә ҡыҙыл этәс ҡуна, пар тирмәне яныл ҡуҡҡә оса.* И. Кинйәбулатов. **Ҡыҙыл юл** тексттың юл башындағы эскәрәк индереп яҙылған өлөшө; яңы юл. *Яңы фекерҙе ҡыҙыл юлдан башлап яҙалар.*

● *Ҡыҙыл телем тыймаһым, ҡыҙым өйөнә һыймаһым.* Мәҡәл. *Үтә ҡыҙыл тиҙ уңа.* Мәҡәл.

**ҠЫҘЫЛ** [2] *и. иҫк.* Алтын.

**ҠЫҘЫЛ** [3] *и. диал.* Тут.

**ҠЫҘЫЛАЙЫУ** *ҡ.* Ҡыҙыл төҫкә инеү; ҡыҙарыу. *Башҡортостан тәне ҡара янған меңәрләгән ҡамсы эҙенән, беҙҙең ҡанды әгәр бергә йыйһаң ҡыҙылайыр ине диңгеҙҙәр.* Б. Бикбай.

**ҠЫҘЫЛБАЛЫҠ** *и.* Мәрсен һымаҡтар ғаиләһенә ҡараған ҡараһыу тәңкәле, оҙонса тәнле, ҡыҙғылт ҡанатлы бик эре йыртҡыс балыҡ.

**ҠЫҘЫЛГВАРДЕЕЦ** *и. ҡар.* **ҡыҙылгвардиясы.**

**ҠЫҘЫЛГВАРДИЯСЫ** *и.* Ҡыҙыл гвардия сафында Совет власын яҡлап һуғышҡан кеше; ҡыҙылгвардеец.

**ҠЫҘЫЛГҮҘ** *и.* Карптар ғаиләһенә ҡараған ҡыҙыл күҙле яҫмыҡ аҡ балыҡ (сабаҡҡа оҡшаған). *Ҡармаҡҡа опто, алабуға, ҡыҙылгүҙ эләгә.* Ж. Кейекбаев.

**ҠЫҘЫЛҒАН** *и.* Тарбаҡай, мурт һабаҡлы, оҙонса япраҡлы, һабағын тотош һырып алған ваҡ-ваҡ ҡына көрән ҡыҙыл сәскәле һыуһыл ер үләне.

**ҠЫҘЫЛҒАНАТ** *и.* Карптар ғаиләһенә ҡараған ҡараһыу йәшел төҫлө, ҡыҙыл ҡанатлы яҫмыҡ балыҡ. *Иртәнге һалҡында бер бәләкәйерәк алабуға менән ус аяһындай ғына ҡыҙылғанат эләкте.* Ф. Иҫәнғолов.

**ҠЫҘЫЛҒОЙРОҠ** *и.* Барҡылдаҡ һымаҡтар ғаиләһенә ҡараған ҡалтырап торған ҡыҙғылт ҡойроҡло урман турғайы; ҡашҡа турғай. *Бөжәк ашаусы ваҡ ҡоштар: беснәктәр, ҡыҙылғойроҡтар өсөн оялар яһап элеү бигерәк тә мөһим.* «Совет Башҡортостаны», 1983, 4 апрель.

**ҠЫҘЫЛЛАНЫУ** *ҡ.* Ҡыҙыл төҫкә инеү; ҡыҙарыу.

**ҠЫҘЫЛЛЫҠ** *и.* **1.** Ҡыҙыл төҫ. *Таң ҡыҙыллығы. Шәфәҡ ҡыҙыллығы.* ■ *Ул [Орҡыя], сәскәләр араһынан ҙур ғына башлы, үҙенең ҡыҙыллығы менән күҙ яуын алып торған бер пионды алып, Ильяска бирҙе.* Ғ. Ибраһимов. *Ҡояш батҡас, һауала ҡыҙыллыҡ оҙаҡ торһа, аяҙ булыр.* Һынамыш.

**2.** Ҡандың ағышы шәбәйеүҙән хасил булған тәндәге ҡыҙыл төҫ. *Сәлих Соняға һоҡланып, текләп ҡарағанда, уны бөтөнләй ҡыҙарта. Соняның таҙа битенә ҡыҙыллыҡ йүгерә башлай.* Б. Ишемғол.

♦ **Йөҙгә ҡыҙыллыҡ килтереү** хурлыҡҡа ҡалдырыу; оятлы итеү. *Һеҙ, ирмен тигән ир-егеттәр, йөҙгә ҡыҙыллыҡ килтермәҫкә тырышығыҙ.* Һ. Дәүләтшина.

**ҠЫҘЫЛСА** [1] *и.* Бөтә тәндә алһыу һипкел ҡаплап, температура ныҡ күтәрелеп, күҙ, тамаҡ тиресәләре шешеп, тымаулата, йүткертә, хәлһеҙләндерә торған бик йоғошло ауырыу.

**ҠЫҘЫЛСА** [2] *и. диал.* Ҡыҙылбалыҡ.

**ҠЫҘЫЛТҮШ** *и.* Алаҡас турғай һымаҡтар ғаиләһенә ҡараған арҡаһы күкһел, түбәһе, ҡойроғо, ҡанат осо ҡара, атаһының түше ҡыҙыл төҫтә булған урман турғайы.

**ҠЫҘЫНЫУ** *ҡ.* Тәнде эҫегә ҡыҙҙырыу. *Ҡояшҡа ҡыҙыныу. Утҡа ҡыҙыныу.* ■ *Алпан-толпан баҫып Айыу ҡомда ятып ҡыҙынырға йылға ярына килде.* С. Кулибай.

● *Кеше яҡҡан утҡа ҡыҙынма.* Мәҡәл.

**ҠЫҘЫП-ТУҘЫУ** *к.* Асыуланып ярһыу, ярһып әрләшеү. *Дәүләт ҡупис ҡыҙып-туҙып Үмәр ҡарттан түләгән мәһәрен кире дәғүәләп ултыра ине.* Һ. Дәүләтшина.

**ҠЫҘЫРАС** *и.* Йортһоҙ-ерһеҙ ил ҡыҙырып йөрөгән кеше. *[Ҡаҙаҡ батыры — Ҡуҙыйкүрпәскә:] Мин апайымды һиңә бирер инем, .. әммә һин ҡыҙрас башҡорт булғанлыҡтан, атайым .. быға риза булыр тип ышана алмайым.* «Ҡуҙыйкүрпәс менән Маянһылыу».

**ҠЫҘЫРАУ** *к. диал. кар.* **ҡыҙыу** [1] 4.

**ҠЫҘЫРБЫЙ** *и. диал.* Ҡыҙырас.

**ҠЫҘЫРТЫУ** *к.* **1.** Төрлө урындарҙа булырға мөмкинлек биреү; гиҙҙертеү. *Донъяны ҡыҙыртыу.*

**2.** *көс. кар.* **ҡыҙырыу.**

**ҠЫҘЫРЫМ** *и.* Ниҙеңдер эргәһенән һуҙылған буй. *Тау ҡыҙырымы. Урман ҡыҙырымы.* ■ *Өҙөп-өҙөп иҫкән ел йылға ҡыҙырымында сәскә атҡан валерьяндың сәскәлт еҫен алып килде.* Ш. Янбаев. *Урал ғына буйы ҡыҙырым сауҡа, ата-олатай йөрөп йәйләгән* (Халыҡ йырынан). *Был ни хәл тип уйға ҡалдылар ҡыҙырым-ҡыҙырым үҫкән таллыҡтар.* А. Игебаев.

**ҠЫҘЫРЫНЫУ** *к. ҡайт. кар.* **ҡыҙырыу.** *Ҡыҙырынып йөрөү.*

**ҠЫҘЫРЫУ** *к.* Рәтләп, арҡыры-буй йөрөү; гиҙеү. *Ауыл ҡыҙырыу. Донъя ҡыҙырыу. Ил ҡыҙырыу. Урам ҡыҙырыу. Ҡыҙырып йөрөп сығыу. Ҡыҙырып ҡарап сығыу.* ■ *Урман шырлығыңды зыр ҡыҙыра әллә нисә төрлө кейегең.* А. Игебаев. *Ул [Аҡназар] көнө буйы урман ҡыҙырып бер йәнлек тә тап итә алмаған* (Әкиәттән).

**ҠЫҘЫУ** [1] *к.* **1.** Бик юғары температуралы, эҫе хәлгә килеү. *Тимер ҡыҙа. Мейес ҡыҙа.* ■ *Зилскийҙ ҡояш ауалап, көн ҡыҙғанса йоҡланы.* Ғ. Дәүләтшин. *Ата-ата уттай ҡыҙа мылтыҡтың көбәктәре* (Халыҡ йырынан). / Еүеш көйө баҫырылып, эҫеү; яныу. *Бесән ҡыҙа. Иген ҡыҙа.* ■ *Күтәремдәрҙә, күбәләрҙә ятҡан ашлыҡ ҡыҙа, үрә башланы.* Б. Бикбай. / Ауырыуҙан йәки бүтән сәбәптән температура күтәрелеү; яныу. *Тән ҡыҙа.* ■ *Оҙаҡ ҡарап торҙом һоҡланып мин хыялымдай матур тау ҡыҙын һәм ныгыраҡ һиҙем торған һайын бит осомдоң ҡыҙып яныуын.* Х. Ҡунаҡбай.

**2.** Хәрәкәттән йылыныу. *Варшаванан сыҡҡанда минең уң аяғым бик ауырта ине, әле ҡыҙып китте, бугай, ауыртмай башланы.* Д. Юлтый. / *күсм.* Бик етеҙ хәрәкәткә килеү, шәбәйеү. *Тәгәрмәстәр ҡыҙғандан-ҡыҙа барып, күҙ эйәрмәй башланы.*

**3.** *күсм.* Шашҡын, ярһыу төҫ алыу, йәнләнеү. *Бәхәс ҡыҙа. Мәжлес ҡыҙа. Уйын ҡыҙа. Ярыш ҡыҙа.* / Саманан тыш көсәйеп, ҡурҡыныс төҫ алыу. *Дауыл ҡыҙа.* ■ *Һуғыш ҡыҙҙы. Гитлерсылар атака артынан атаҡаға ташландылар һәм, кавалеристарҙы сигендереп, Чир йылғаһына батырырға уйланылар.* Ә. Ихсан. / Йөрәкһеп, ярһыған хәлгә килеү. *Ҡыҙып бейеү. Ҡыҙып һөйләү.* ■ *Морат иптәш менән һөйләшә торғас, ҡыҙып китеп, үҙебеҙҙең егет саҡтарҙы һөйләргә тотондоҡ.* Т. Йәнәби.

**4.** *күсм.* Асыуланып, нәфрәтләнеп ярһыу; ҡотороу, шашыныу. *Ҡәмәр ҡортҡа ҡыҙып китеп, мейес араһынан табағас алып, аҡырып-баҡырып, Ғәләүҙе ҡыуа башланы.* Т. Йәнәби. *Батыр үҙенең ҡыҙа башлауын тойҙо. Ҡыҙа башлаһа, уның яңаҡ мускулдары һелкенә, ирендәре ҡымтыла һәм ҡулдар йоҙроклана башлай торғайны. Әле лә шулай булды.* И. Ғиззәтуллин. *Убыр ҡәйнә төкөрөк сәсеп, тағы ҡыҙып китте* (Әкиәттән). / Асыуланып әрләү. *Мал бирепкәй алған йәрең түгел, инәкәйем ҡыҙыр, ҡайтайым* (Халыҡ йырынан).

**5.** *күсм.* Нимәгәлер эйә булырға теләп йөрәкһеү, ынтылыу; ымһыныу, ҡыҙышыу. *Ҡаҙаҡтар Исмәғил ҡарттың өйөр-өйөр малына, бисәһенә, килененә ҡыҙған* (Әкиәттән).

◆ **Күҙ ҡыҙыу** нимәгәлер һоҡланып, там итеү; ҡыҙығыу. *Шундай шәп баҡсаға, ҡалып ҙурлыҡ ҡыярҙарға кемдең күҙе ҡыҙмаһын.* А. Ғирфанов. **Ҡан ҡыҙыу** *кар.* **ҡан** [1]. **Эс ҡыҙыу** *диал. шул уҡ* **күҙ ҡыҙыу** (*кар.* **күҙ**). *Атаҡайым мине бирмәҫ ине, эсе лә ҡыҙа аҡсаға* (Сеңләүҙән).

● *Ҡыҙҙың ҡыҙғаны ҡыҙыл сәкмән.* Мәҡәл.

**ҠЫҘЫУ** [2] *с.* **1.** Бик юғары температуралы; эҫе. *Ҡыҙыу көн. Ҡыҙыу ҡояш. Ҡыҙыу мунса. Ҡыҙыу тимер.* ■ *Бер ҡыҙыу ҡул минең биттән һыйпап уятты.* Д. Юлтый. *Әллә уның [ҡыҙҙың] күҙ йәштәре сыҡҡан, әллә ҡыҙыу биткә йәбешкән ҡар бөртөктәре ирегән ине инде, белмәйем.* Б. Бикбай. // *Ҡояш төшлөккә еткәндә, уның ҡыҙыуынан ялан ялҡынға әйләнде.* Һ. Дәүләтшина. *[Айнурҙың] әсәһе икмәк һалған һайын мейестең алдына ғына, күмер ҡыҙыуы бәрелеп торған ергә, ҡамырҙан «турғай» эшләп ултырта.* Н. Мусин.

**2.** *күсм.* Бик етеҙ, йылдам. *Ҡыҙыу хәрәкәт.* // *Ҡыҙыу атлау.* ■ *Ҡыҙыу аҙымдар менән беҙ халыҡ шаулашҡан яҡҡа йүнәлдек. Урамда ни тиклем кеше! Артҡа ла үтәләр, алға ла үтәләр. Ҡыҙыу ҙа үтәләр, аҡрын да үтәләр.* С. Агиш. *Был таш түбән төшкән дә ҡыҙыуыраҡ тәгәрләп, кире тау башына менеп китте, ти.* «Алпамыша».

**3.** *күсм.* Бик көсөргәнешле, ярһыулы. *Ҡыҙыу һуғыш. Түйҙың ҡыҙыу мәле. Уттай ҡыҙыу эш.* ■ *Колхозда ҡыҙыу йәйге эш ваҡыты. Эшкә яраған бөтә кеше ҡырға киткән. Ауылда ҡарт-ҡоро, бала-саға ғына ҡалған.* Т. Байыш. / Ярһыу хисле, ялҡынлы, көслө. *Ҡыҙыу бәхәс.* // *Ҡыҙыу барған эш.* ■ *Саф йөрәктәргә дәрт, ғәйрәт бирә торған ҡыҙыу тәбриктәр булды.* Ш. Шәһәр. *Хөтбәнән һуң һөйләне бер ен нотоҡ, бик ҡыҙыу, бик дәртле, бик ялҡынлы итеп.* Ш. Бабич.

**4.** *күсм.* Тиҙ тоҡанып, тиҙ асыуланып, ярһып китеүсән; ҡыҙма. *Ҡыҙыу холоҡло.* ■ *Тимеркәй бигерәк ҡыҙыу, үсексән малай.* Ф. Иҫәнғолов. **Ҡыҙыу ҡанлы** *кар.* **ҡан** [1]. *Ҡыҙыу ҡанлы кеше.* ■ *Ҡыҙыу ҡанлы егет ине шул Хисмәт. Шуға ла ошо бер офицерҙы тотоп дөмбәҫләп ташлай.* В. Исхаков.

● *Ерек утындың ҡыҙыуы юҡ, еңгә ҡатындың йылыуы юҡ.* Мәҡәл. *Тимерҙе ҡыҙыуында һуҡ.* Мәҡәл.

**ҠЫҘЫУЛАНЫУ** *к.* **1.** Етеҙ, йәһәт хәрәкәт алыу; шәбәйеү. *Ауылға табан ул аҙымын ҡыҙыуланы.*

**2.** Көсөргәнешле, йәнле төҫ алыу. *Ауылда яҙ көнө эш ҡыҙыулана.* / *күсм.* Ҡыҙып китеү; яр-

һыу. *Хәбир ағай: — Мин нисек түләйем? Мин ярты душ ер көтәм. Ә ана .. кешеләр өсәр, дүртәр душ ер биләйҙәр,— тип ҡыҙыулана башлағайны, староста уны бик ҡыҫҡа тотто.* М. Ғафури.

**ҠЫҘЫУЛАТЫУ** *ҡ.* **1.** Етеҙ, йәһәт хәрәкәтле итеү; шәбәйтеү. *Аҙымды ҡыҙыулатыу.* ■ *Шәрифә лә һағынып килә, күрәһең. Мине күреү менән атын ҡыҙыулата.* И. Ғиззәтуллин.

**2.** Көсөргәнешле, ашығыс итеү; ҡабаландырыу. *Эште ҡыҙыулатыу.*

**ҠЫҘЫУЛАУ** *ҡ. ҡар.* **ҡыҙыулатыу.** *Аҙымды ҡыҙыулау. Эште ҡыҙыулау.*

**ҠЫҘЫУЛЫҠ** *и.* **1.** Юғары температурала булыу; эҫелек. *Көн кисләнә. Ҡыҙыулыҡ һүрелде.* Һ. Дәүләтшина. *Емештең ҡыҙыулығы төштө, һауығыу сифаттары күҙенә сыҡты.* З. Биишева.

**2.** *күсм.* Тиҙ генә тоҡанып барыу сифаты. *[Мифтахҡа — Шәмсетдин:] Мин һине былай уҡ ҡыҙыу тип белмәй инем. Хәйер, һине шул ҡыҙыулығың харап иткәндер.* К. Мәргән.

**ҠЫҘЫШМА** *с. диал.* Ҡыҙма. *Ҡыҙышма кеше.*

**ҠЫҘЫШТЫРЫУ** *ҡ.* **1.** Асыуландырып ярһытыу. *Этте ҡыҙыштырыу. Баланы ҡыҙыштырыу.*

**2.** *күсм.* Там иттереү; ҡыҙыҡтырыу. *Ҡыҙыл емештәре менән ҡыҙыштырып тора миләш.* Д. Исламов.

**ҠЫҘЫШЫУ** *ҡ.* **1.** Тулҡынланыуҙан, ярһыуҙан һ. б. ҡыҙарып, эҫе хәлгә килеү. *Бит алмалары тулышып, ҡыҙыша башланы.* Б. Бикбай.

**2.** *күсм.* Йөрәкһеп, дәртләнеп ярһыу. *[Өмәселәр] туҡтап, йырлап алғас, тағы ҡыҙышып эшкә тотона.* Ғ. Амантай.

**3.** *күсм.* Асыуланып ярһыу. *Һөйләшеп ултыра торғас, ҡыҙыштыҡ та киттек.* М. Ҡулаев.

**4.** *күсм.* Нимәгәлер күңел биреп, там итеп, йөрәкһеү; ҡыҙығыу. *Малға ҡыҙышыу.* ■ *Ололар Шаһбал ҡарт баҡсаһына инә алмайҙар ине. Ә беҙ, малай-шалай, ҡыҙыша торғас, оятты артҡа ташланыҡ.* А. Ғирфанов.

◆ **Күҙ ҡыҙышыу** *шул уҡ* **күҙ ҡыҙыу** (*ҡар.* **күҙ**).

**ҠЫЖАУ** *с.* Йомошҡа ҡаты; һаран. *Ҡыжау кеше. Ҡыжау булыу.*

**ҠЫЖҠ** *оҡш.* Өйрәк тауышын белдергән һүҙ. *Ҡыжҡ итеү.*

**ҠЫЖҠ-ҠЫЖҠ, ҡыжҡ та ҡыжҡ** *оҡш.* Ҡабат-ҡабат ҡыжҡ иткән тауышты белдергән һүҙ. *Ҡыжҡ-ҡыжҡ итеү. Ҡыжҡ-ҡыжҡ килеү.*

**ҠЫЖҠЫЛДАУ** *ҡ.* **1.** Ҡыжҡ-ҡыжҡ итеү, ҡыжҡ-ҡыжҡ килеү. *Ҡыжҡылдап ҡысҡырыу.*

**2.** Ҡаж-ҡож йүткереү; ҡажҡылдау.

**ҠЫЖМЫРЙЫУ** *ҡ. диал.* Ҡымырйыу.

**ҠЫЖМЫР-ҠЫЖМЫР: ҡыжмыр-ҡыжмыр килеү** ҡыжмырлау.

**ҠЫЖМЫРЛАУ** *ҡ.* **1.** Өйкөлөшөп, сыуалып ҡайнашыу; ҡымйыу. *Бөтә ер өҫтө, бөтә тереклек ҡыжмырҙай, йәнләнә, ҡояш яҡтыһын күрергә ашыға.* К. Мәргән. *Разведка Валькова станцияһында дошмандың ҡыжмырлап ятҡанын хәбәр итте.* Ә. Ихсан.

**2.** *диал.* Ҡымырйыу.

**ҠЫЖМЫРЛАШЫУ** *ҡ. урт. ҡар.* **ҡыжмырлау.**

**ҠЫЖРАУ** *ҡ. диал.* Берәй нәмә эшләргә ашҡынып, ярһып тороу. *Үгеҙ һөйләй үҙенә айыу осрағанын ашамаҡсы булып уны, ҡыжрағанын, шул дошмандан ҡасамын тип, ҡотолам тип, күлдәр йөҙөп, батҡаҡ ярып быҫрағанын.* С. Ҡудаш.

**ҠЫЖЫНЫУ** *ҡ. диал.* **1.** *ҡар.* **ҡыҙышыу** 3.

**2.** Тызыныу.

**ҠЫЗЫЙЫҠ** *и диал.* Ҡаҙғатау. *Ҡызыйыҡ тауышы. Ҡызыйыҡ ояһы.*

**ҠЫЗЫҠЛАУ** *ҡ. һөйл.* Текемләп әйтә-әйтә ҡыҙҙырыу, ҡотортоу. *Баланы ҡызыҡлау.*

**ҠЫЗЫРЫҠЛАУ** *ҡ.* **1.** Ниҙер ҡылырға йәтешләү. *Ҡызырыҡлап йөрөү.*

**2.** *диал.* Ҡызыҡлау.

**ҠЫЙ** [1] *и.* **1.** Ниҙеңдер таҙалыған алған кәрәкһеҙ йәки ташландыҡ ваҡ-төйәк нәмә; суп-сар. *Иҙән ҡыйы. Ярмаҡың ҡыйын таҙартыу.* / Кәртәһарайҙағы мал тиҙәге. *Ҡый өйөү. Ҡый түгеү.* / *күсм.* Төрлө насар нәмә; кәмселек, етешһеҙлек. *Һүҙҙән ҡый эҙләү.*

**2.** (*йәки* **ҡый үләне**) Баҫыуҙағы, иген араһындағы төрлө кәрәкһеҙ үҫемлек; сүп. *Картуфты ҡый баҫҡан.* ■ *[Гәйни:] Бойҙайҙың ҡыйы булһа, уташтырырбыҙ.* Т. Йәнәби.

● *Ҡыҙ китте — ҡый китте.* Мәҡәл. *Мал ҡыйы менән, ҡунаҡ һыйы менән.* Әйтем.

**ҠЫЙ** [2] *киҫ диал. ҡар.* **бит** [3]. *Сакырҙым ҡый, килмәнең ҡый, йәндәремде ҡыйҙың ҡый* (Халыҡ йырынан).

**ҠЫЙБАТ** *с.* **1.** Күп аҡсаға торошло, юғары баһаланған; *киреһе* арзан. *Ҡыйбат тауар. Ҡыйбат костюм. Ҡыйбат хаҡҡа алыу. Ҡыйбат хаҡҡа биреү.* // *Ҡыйбат алыу. Ҡыйбат түләү. Ҡыйбатҡа биреү.* ■ *Элекке заманда ярлы балаларына уҡыу эше бик ҡыйбатҡа төшә торғайны.* Т. Йәнәби. *Кеше ауңаған көл был ауылда ҡыйбат йөрөй икән: бер көнәгенә ике көнәк картуф бирәләр* (Әкиәттән).

**2.** Юғары баһаланған; затлы. *Ҡыйбат ташлы алҡа.*

**3.** *күсм.* Әһәмиәтле, мөһим, ҡәҙерле. *Ғ. Туҡайҙың әҙәби мираҫы беҙҙең өсөн ҡыйбат.* С. Агиш. / Ҡәҙерле, ғәзиз. *Баш һау булһа, мал табылыр, баш ҡыйбат.* Б. Бикбай. *Ҡыҙыл байраҡ шуға ҡыйбат, ул көрәшеп алынған* (Халыҡ йырынан).

● *Ҡыйбат таштың ауырлығы юҡ.* Мәҡәл. *Ҡыҙыл йомортҡа көнөндә ҡыйбат.* Мәҡәл.

**ҠЫЙБАТАЙЫУ** *ҡ. ҡар.* **ҡыйбатланыу.**

**ҠЫЙБАТЛАНЫУ** *ҡ.* **1.** Юғары хаҡлыға, ҡыйбатҡа әйләнеү; хаҡы күтәрелеү, ҡыйбат булыу.

**2.** Ҡәҙерлегә, баһалыға әйләнеү; ҡәҙерле булыу. *Ҡыйбатланып китеү.*

● *Һәнәге ҡыйбат түгел, һаплағас ҡыйбатлана.* Мәҡәл.

**ҠЫЙБАТЛАТЫУ** *ҡ.* **1.** *йөкм. ҡар.* **ҡыйбатлау.**

**2.** Хаҡын күтәреү, ҡыйбатҡа әйләндереү. *Тауар хаҡын ҡыйбатлаттылар.*

**ҠЫЙБАТЛАУ** *ҡ.* Ҡыйбатҡа әйләндереү, ҡыйбат итеү. *Мал хаҡын ҡыйбатлау.*

**ҠЫЙБАТЛЫ** *с.* Юғары хаҡлы. *Ҡыйбатлы алҡа. Ҡыйбатлы тауар.*

**ҠЫЙБАТСЫЛ** *с.* Юғары хаҡ һораусан. *Ҡыйбатсыл кеше.*

**ҠЫЙБАТСЫЛЫҠ** *и.* Бөтә нәмәнең ҡыйбат булыу хәле, ҡыйбат хаҡлылыҡ. *Баҙарҙағы ҡыйбатсылыҡ. Ҡыйбатсылыҡ булыу.*

**ҠЫЙБАТҺЫНЫУ** *ҡ.* Ҡыйбат тип табыу, ҡыйбатҡа һанау. *Ҡыйбатһынһам да, өндәшмәнем. Берәү теленән өҙөлөп, өлтөрәп торғас, ҡалай итәһең.* Ғ. Дәүләтшина.

**ҠЫЙҒАҠ**[1] *с.* Ҡыйып, ҡырҡып барыусан; ҡыйғыр. **Ҡыйғаҡ үлән** *диал.* күрән. *Атлап бара. Ҡапыл туҡтаны ла ҡыйғаҡ үлән өҙә эйелеп. Йүләр ҡыҙый, ниңә ҡыйғаҡ үлән, аҡ сәскә бит ҡалды түгелеп.* К. Кинйәбулатова.

**ҠЫЙҒАҠ**[2] *и. диал.* Кәйелтмәк.

**ҠЫЙҒАҠ**[3] *и. диал. ҡар.* **ҡый**[2].

**ҠЫЙҒАҠ**[2] *окш.* Ҡаҙ тауышы. *Ҡыйғаҡ тип ҡысҡырыу.*

**ҠЫЙҒАҠ-ҠЫЙҒАҠ** *окш.* Ҡабат-ҡабат ҡыйғаҡ иткән тауышты белдергән һүҙ. *Ҡыйғаҡ-ҡыйғаҡ итеү.* ■ *Ҡыйғаҡ-ҡыйғаҡ! — тип ҡысҡырҙы оса-оса ҡыр ҡаҙы. Ҡотланы, буғай, ҡыр ҡаҙы атлас кейгән ил яҙын.* Ғ. Ғүмәр.

**ҠЫЙҒАҠЛАУ** *ҡ.* Ҡыйғаҡ-ҡыйғаҡ итеү. *Ҡыйғаҡлап осоу. // Ҡаҙҙар ҡыйғаҡлауы.* ■ *Ул ҡай ваҡытта, ишек алдында ҡаҙҙарҙың ҡысҡырғанын ишетһә, башын ныҡлап күтәрә, дәртләнеп китеп, үҙе лә ҡыйғаҡлап ебәрә һәм ҡанаттарын ҡағып ҡуя ине.* М. Ғафури. *Ҡаҙҙарҙың ҡыйғаҡлауы яҙ килгәнен белдерә.* Ғ. Зөлҡәрнәев.

**ҠЫЙҒАҠЛАШЫУ** *ҡ. урт. ҡар.* **ҡайғаҡлау.** *Ҡаҙҙар ҡыйғаҡлашып осоп китте, пыр туҙҙылар әтәс-тауыҡтар.* Б. Ишемғол.

**ҠЫЙҒАЛАҠ** *и. диал.* Кәйелтмәк.

**ҠЫЙҒАЛАУ** *ҡ.* **1.** Бер яҡҡа ҡыйшайып, түңәрәкләп боролоу; кәйелеү. *Ҡыйғалап та осҡан ҡыйғыр ҡош йығылып та төшә уҡ тейһә* (Халыҡ йырынан).

**2.** *диал.* Кәйелеү.

**ҠЫЙҒАС**[1] *с.* **1.** Ҡыя ғына булып ҡыйылып торған. *Ҡыйғас ҡанат. Ҡыйғас таш. Ҡыйғас яға. Ҡыйғас булыу.* ■ *Муйындары бер ҡолас, ҡыйғас ҡамыш ҡолаҡлы .. Аҡбуҙ тора ине, ти.* «Аҡбуҙат».

**2.** Ҡыйғасланып, дуғаланып торған (ҡашҡа ҡарата). *Сәлимәкәй төнөн йоҡлағанда, ай көнләшә ҡыйғас ҡашынан* (Халыҡ йырынан).

**3.** *һөйл. и. мәғ.* Ҡыйыҡлап киҫелгән күлдәк итәге; ҡыйыҡ. *Аҡлы ситса күлдәгеңдең итәге алты ҡыйғас* (Халыҡ йырынан).

**4.** *диал.* Ҡыя. *Беҙҙән ҡыйғасыраҡ урам аша Кәйүм ағайҙар тора.* М. Кәрим.

**ҠЫЙҒАС**[2] *и.* Ҡыя булып, ҡыйылып ҡына һуҙылған ҡалҡыулыҡ.

**ҠЫЙҒАС**[3] *с. ҡар.* **ҡыйғаҡ**[1]. **Ҡыйғас бысаҡ.**

**ҠЫЙҒАСЛАНДЫРЫУ** *ҡ.* Ҡыйғасҡа әйләндереү, ҡыйғас итеү; ҡыйылтыу. *Ҡашты ҡыйғасландырыу.*

**ҠЫЙҒАСЛАНЫУ** *ҡ.* Ҡыя ғына булып ҡыйылыу; ҡыйғас булыу. *Ҡыйғасланып торған ҡаш.*

**ҠЫЙҒАСЛАТЫУ** *ҡ.* **1.** Ҡыйғас итеү; ҡыя итеп ҡыйылдырыу. *Ҡашты ҡыйғаслатыу.*

**2.** *диал.* Ҡыялатыу.

**ҠЫЙҒАСЛАУ** *ҡ.* **1.** Ҡыя ғына итеп ҡыйылдырыу; ҡыйғас итеү. *Ҡашты ҡыйғаслау.* ■ *Ҡыйыҡҡайын ҡыйғаслап, яһап ҡуйҙым оясыҡ.* Ғ. Амантай.

**2.** Ҡыялап килеп боролоу. *«Волга» йәйләүҙе ҡыйғаслап урап, ҡаршы яҡтан килеп туҡтаны.* Ә. Вәхитов. *Зәйнәп Сейәлетау битенән ҡыйғаслап Ғәли менән Өлфәттең ҡаршыһына килеп сыҡты.* Ғ. Лоҡманов.

**ҠЫЙҒЫ** *и.* Ҡыйып бара торған үткер ҡорал; ҡыйғыс. *Ҡыйғы менән юныу.*

**ҠЫЙҒЫЛ: ҡыйғыл ялан** *һөйл.* Урманы булмаған тип-тигеҙ урын. *Өйҙөрәкәй буйы ҡыйғыл ялан, ҡыйғыр, меҫкен, йөрөй ем тапмай* (Халыҡ йырынан).

**ҠЫЙҒЫЛАШЫУ** *ҡ. ҡар.* **ҡыйҡылашыу.** *Ҡайтырға тип ҡыйғылаша.*

**ҠЫЙҒЫН: ҡыйғын үлән** *диал.* ҡылған. *Ҡыйғын үлән менән ҡапланған дала.*

**ҠЫЙҒЫР**[1] *с.* **1.** Ҡыйып, ҡырҡып барған, үткер. *Ҡыйғыр ҡылыс. Ҡыйғыр бәке.*

**2.** *күсм.* Етеҙ, сос. *Ыласындан да бейек оса торған ҡош батшаһы ҡыйғыр бөркөт бар.* Салауат Юлаев.

**ҠЫЙҒЫР**[2] *и.* Ыласын һымаҡтар ғаиләһенә ҡараған түбәһе менән арҡаһы көкшел, тамаҡ аҫты менән муйыны аҡ, түше менән ҡорһағы арҡырылай һыҙыҡ-һыҙыҡ һор сыбар төҫтә булған түңәрәгерәк ҡыҫҡа ҡанатлы, оҙон көрәнһыу ҡойроҡло, күгәрсендән бәләкәйерәк йыртҡыс урман ҡошо. *Була ҡоштар араһында үткер, хәйләкәр ҡыйғыр. Ваҡ ҡош күрһә күҙ ҡырында, уға һис бирмәй тынғы.* С. Кулибай. *Сатаҡ мөгөҙ боланы, ыласын, ҡыйғыр, бөркөтлө Урал тигән илем бар* (Ҡобайырҙан).

**ҠЫЙҒЫР**[3]**: ҡыйғыр ялан** йәйелеп ятҡан ҡырағай ҡола ялан. *Иҙелде аша сығып оло юлға төшкәс, иге-сиге күренмәгән ҡыйғыр ялан башланды.* Ж. Кейекбаев.

**ҠЫЙҒЫС** *и.* Ҡыйып, ҡырҡып барған үткер ҡорал; ҡыйғы.

**ҠЫЙҘЫРЫУ** *ҡ.* **1.** Үткер нәмә менән өҙә ҡырҡтырыу. *Таш күкрәкле тауҙарҙың он-талҡанын килтергән, Уралдың ен-пәрейен барыһын баш эйҙергән, эймәһә — баш ҡыйҙырған даны сыҡҡан ҡылыс ул* (Әкиәттән).

**2.** *күсм.* Алдан үтеп китергә мөмкинлек биреү. *Юлды ҡыйҙырыу. [Йәмһүр:] Ул мәлгүндәр [йыландар] юлымды ҡыймаҡсы булып, бер-бер артлы килеп сығып ҡына торҙолар. Әммә берәүһенән дә юлымды ҡыйҙырманым* (Әкиәттән).

**ҠЫЙҠ** *окш.* Яңғырауыҡлы өҙөк тауышты белдергән һүҙ. *Ҡыйҡ итеү.*

**ҠЫЙҠАНЛАУ** *ҡ. диал.* Ҡыйпанлау. *Ҡыйҡанлап йөрөү.*

**ҠЫЙҠ-ҠЫЙҠ, ҡыйҡ та ҡыйҡ** *окш.* Ҡабат-ҡабат ҡыйҡ иткән тауышты белдерә. *Ҡыйҡ-ҡыйҡ итеү. Ҡыйҡ-ҡыйҡ ҡысҡырыу.*

**ҠЫЙ-ҠЫЙҠЫУ** *и. диал.* Ҡыран-ҡыйҡыу. *Ҡый-ҡыйҡыу килеү.*

**ҠЫЙ-ҠЫЛАМТА** *и. йыйн. диал.* Ҡый-ҡыпыр. *Ҡый-ҡыламта йыйыу.*

**ҠЫЙҠЫЛАШЫУ** *ҡ.* Ниҙер эшләргә ныҡышыу. *[Ҡарт:] Ҡарсыҡ, йәшелсә ултыртам, тип ҡыйҡылаша.* Р. Низамов.

**ҠЫЙҠЫЛДАҠ** *с.* Ҡыйҡ-ҡыйҡ ҡысҡырыусан. *Ҡыйҡылдаҡ ҡаҙ.*

**ҠЫЙҠЫЛДАУ** *ҡ.* **1.** Ҡыйҡ-ҡыйҡ итеү, ҡыйҡ-ҡыйҡ ҡысҡырыу. *Ҡара башлы тумыртҡа ҡыйҡылдап ағастан-ағасҡа осто.* Я. Хамматов. *Бәпкә ҡыйҡылдап барып, инәһенә ҡушылды.* Ж. Кейекбаев.

**2.** Ҡыйҡ итеп көлөү; хихылдау. *[Хәтижә:] — Эй, ошо ҡыҙҙар, юкка ҡыйҡылдайҙар. Ҡыҙҙар тишек күрһә лә көлә, тип шуға әйткәндәрҙер,— тине.* Я. Хамматов.

**ҠЫЙҠЫЛДАШЫУ** *ҡ. урт. ҡар.* **ҡыйҡылдау.** *Ҡаҙҙар .. йоҡоло тауыш менән үҙ-ара ҡыйҡылдашып һыуға төшәләр.* С. Агиш.

**ҠЫЙ-ҠЫЛҠЫ** *и. йыйн. ҡар.* **ҡый-ҡыпыр.**

**ҠЫЙ-ҠЫМ** *и. йыйн.* **1.** Ваҡ ҡый, ыуалсыҡ. *Икмәк ҡый-ҡымы. Шәкәр ҡый-ҡымы.*

**2.** *күсм.* Кешеләгә ваҡ-төйәк етешһеҙлек; кер, сүп. *Кешенән ҡый-ҡым эҙләү.*

**ҠЫЙ-ҠЫМЫР** *и. диал.* Ҡыран-ҡыйҡыу.

**ҠЫЙ-ҠЫПЫР** *и. йыйн.* Төрлө ваҡ-төйәк ҡалдыҡ, ташландыҡ нәмә; сүп-сар.

**ҠЫЙҠЫУ** *и.* Һөрәнләгән, һайт-һойт иткән сыр-сыу тауыш. *Ҡайһы берәүҙәр тауға үрмәләгән машинаны ҡыйҡыу һалып, этеп маташа.* Н. Мусин.

**ҠЫЙ-ҠЫУАТ** *и. йыйн. ҡар.* **ҡый-ҡыпыр.**

**ҠЫЙҠЫУЛАУ** *ҡ.* Һөрәнләп, һайт-һойт килеп ҡысҡырыу; ҡый-ҡыу һалыу. *Ҡыйҡыулап мал ҡыуыу. Бүре килһә, бөтә халыҡ ҡыйҡыулап сыға.* ■ *Ҡулын болғай-болғай шат ҡыйҡыулап, йүгереп ҡайтты Иршат мәктәптән: «Әсәй! .. Әсәй! .. Ишеттеңме? Һуғыш бөткән! Һуғыш бит бөткән!* Р. Сафин.

**ҠЫЙҠЫУЛАШЫУ** *ҡ. урт. ҡар.* **ҡыйҡыулау.** *Ҡыйҡыулашып асыҡ машина менән йәйләүселәр ҙә килеп төштө.* Ғ. Вәлиев.

**ҠЫЙҠЫУ-ҺӨРӘН** *и. йыйн.* Ығы-зығылы сыр-сыу тауыш. *Халыҡ әллә нимәнән ҡыҙыҡ табып, ҡыйҡыу-һөрән һалып, мыж килеп һыу инә.* Ф. Иҫәнғолов.

**ҠЫЙЛАНЫУ** [1] *ҡ.* **1.** Ҡыйлыға әйләнеү, ҡыйлы булыу. *Ҡыйланған иҙән.*

**2.** Ҡый үләндәре менән тулыу. *Бер йыллыҡ үләндәрҙән һуң баҫыу ныҡ ҡыйлана, тупраҡтың дым запасы ҡырҡа наҡыҫлана.* «Совет Башҡортостаны», 1970, 22 март.

**ҠЫЙЛАНЫУ** [2] *ҡ. диал.* Ҡыланыу.

**ҠЫЙЛАУ** *ҡ.* **1.** Ҡыйлы итеү, сүпләү. *Иҙәнде ҡыйлау.*

**2.** Ҡый үләнле итеү; сүпләү. *Ҡый үләне баҫыуҙы ҡыйлай.*

**ҠЫЙЛЫ** *с.* **1.** Ҡыйы, сүбе булған; ҡый ҡатыш. *Ҡыйлы иҙән.* ■ *Орлоктоң ҡыйлы, ас булыуы сәбәпле, йыйған игендәр утыҙ-ҡырҡ боттан артмай торғайны.* Ғ. Дәүләтшин.

**2.** Ҡый үләнле. *Ҡыйлы баҫыу.*

**ҠЫЙЛЫҠ** *и.* Сүп-сар түгә торған урын; сүплек. *Ҡыйлыҡҡа түгеү.*

**ҠЫЙМА** [1] *и.* Йылҡы малы тороҡҡан мәлдә барлыҡҡа килгән йоғошло ауырыу.

**ҠЫЙМА** [2] *и. диал.* Туҡ эсәк (*ҡар.* **эсәк**). *Ашҡа ҡыйма турау.*

**ҠЫЙМЫЛ** *и. иҫк.* Хәрәкәт. *Барҙы ла бала ҡыҙға ҡулын һалды, ҡарағым, сырағым, тип ҡыймыл һалды.* «Бабсаҡ менән Күсәк».

**ҠЫЙМЫЛДАТЫУ** *ҡ.* **1.** Урындағы көйө еңелсә хәрәкәтләндереү; ҡуҙғатыу, ҡыбырлатыу. *Ауыҙҙы ҡыймылдатыу. Бармаҡты ҡыймылдатыу. Өҫтәлде ҡыймылдатыу.* ■ *Мельников .. ҡул-аяғын ҡыймылдатып йылыта.* А. Таһиров.

**2.** Урындан ҡуҙғатыу, йөрөтөү. *Бәндәне ризыҡ тигән ҡыймылдатыр; сәселгән ризығы булһа, йөрөп ятыр.* Аҡмулла.

◆ **Ҡыл да ҡыймылдатмау** *шул уҡ* **ҡыл да ҡыбырлатмау** (*ҡар.* **ҡыл**).

**ҠЫЙМЫЛДАУ** *ҡ.* **1.** Урындағы көйө еңелсә хәрәкәт яһау; ҡуҙғалыу, ҡыбырлау. *Ҡыймылдамай ултырыу.* ■ *[Дәүләтбай] аҙ ғына ҡыймылдағайны, аяғының ауыртыуына сыҙай алмай тағы һуштан яҙҙы.* И. Көҫәпҡол. *Бабай башын һөйәп ултырған таш ҡыймылдай башлаған* (Әкиәттән).

**2.** Урындан ҡуҙғалыу, ҡуҙғалып йөрөү. *Йәһәт ҡыймылдау.* ■ *[Шәмсинур:] Һин ҡыймылдаған-са, яңы сыҡҡан ҡояштарың байып бөтөр.* Ә. Атнабаев.

**ҠЫЙМЫЛДАШЫУ** *ҡ. урт. ҡар.* **ҡыймылдау.** *Ҡыймылдашып йөрөү.*

**ҠЫЙМЫЛЫУ** *ҡ. диал.* Ҡыймылдау. *Сымылдыҡтың шаршауы тәҙрәнән ингән елгә ҡыймылып ҡуя.*

**ҠЫЙМЫРЛАУ** *ҡ. диал.* Ҡыймылдау. *Хәсән аҡһаҡалдың хәлһеҙ ирендәре саҡ ҡыймырлай.* Ә. Вахитов.

**ҠЫЙНАЛДЫРЫУ** *ҡ.* Ыҙа, ғазап кисереү, йонсотоу.

**ҠЫЙНАЛЫУ** *ҡ.* **1.** Ыҙа, ғазаптан ҡаҡшау, йонсоу. *Ауыр эштән ҡыйналыу.* ■ *Эй, ҡалын ҡорһаҡлы бай, .. туҡ тороп, рәхәткә күнгән эстәрең ҡыйналдымы?* Ш. Бабич.

**2.** *диал.* Туҡмалыу.

● *Йән ҡыйналмай, йомош бөтмәй.* Әйтем.

**ҠЫЙНАТЫУ** *ҡ. диал.* Туҡматыу.

**ҠЫЙНАУ** *ҡ.* **1.** Ыҙа, ғазап менән ҡаҡшатыу, йонсотоу. *[Заһиҙә:] Үҙ ҡайғымды яҙып, йәнен ҡыйнамайым тинем.* Д. Исламов.

**2.** *диал.* Туҡмау.

**ҠЫЙП** *окш.* Бер яҡҡа ҡапыл янтайған йәки ҡыйшайған хәрәкәтте белдергән һүҙ. *Ҡыйп итеү. Ҡыйп итеп ҡалыу.*

**ҠЫЙПАЙЫУ** *ҡ.* Бер яҡҡа ҡырынайыу, ҡыйшайыу. *Ҡыйпайып китеү.* ■ *Нишләтһәләр риза булып, тауыҡ тик торҙо. Әтәскә ҡыйпайып ҡарап, йылмайып ҡуйҙы.* К. Кинйәбулатова.

**ҠЫЙПАҠЛАУ** *ҡ.* **1.** Ҡыйпып-ҡыйпып юныу.

**2.** *диал.* Ҡыйпанлау.

**ҠЫЙПАНЛАҠ** *с.* Ҡыйпан-ҡыйпан ҡыланыусан; ҡылансыҡ, ҡыйпысыҡ. *Ҡыйпанлаҡ ҡыҙ.*

**ҠЫЙПАНЛАУ** *ҡ.* Ҡыйпан-мыйшан ҡыланыу; ҡылансыҡланыу.

● *Ҡыҙ ҡайпанлауын ҡуймаҫ.* Әйтем.

**ҠЫЙПАНЫУ** *ҡ. диал. ҡар.* **ҡыйпылыу** 2.

**ҠЫЙПЫҠ** [1] *с. диал.* Ҡыйпысыҡ.

**ҠЫЙПЫҠ** [2] *и.*, **ҡыйпыҡ ҡар** *диал.* Ҡырпаҡ.

**ҠЫЙПЫЛДЫРЫУ** *ҡ.* Бер ситкә ҡыялатыу, ҡәйелтеү. *Малай һыу өҫтөнән ялпаҡ таштарҙы ҡыйпылдырып уйнарға яратҡан* (Әкиәттән).

**ҠЫЙПЫЛСЫҠ** [1] *и.* Ҡыйып ҡырҡып алынған киҫәк, бәләкәй генә киҫәк; ҡырҡынды, ҡыйпыс.

**ҠЫЙПЫЛСЫҠ** [2] *с.* Ҡыйпылып осоуға йәтешле; ялпаҡ. *Ҡыйпылсыҡ таштарҙы һыу өҫтөнән ырғытып уйнаныҡ.* М. Кәрим.

**ҠЫЙПЫЛЫУ** *ҡ.* **1.** *төш. ҡар.* **ҡыйпыу.**

**2.** Бер ситкә ҡыялау. *Шәл аҫтынан маңлайына ҡыйпылып төшкән сәс уны .. мөләйем итеп тора.* Т. Килмөхәмәтов.

**3.** Ҡапыл бер яҡҡа янтайыу; ҡыйғалау. *Ҡағыҙ киҫәктәре ҡыйпылып иҙәнгә оса.* Х. Ғиләжев. *Бүре, ҡаршылағы кешеләрҙе күргәс, бер яҡҡа ҡыйпылып саба башланы, ти* (Әкиәттән).

**ҠЫЙПЫЛЫШЫУ** *к. урт. кар.* **ҡыйпылыу.** *Аҡсарлаҡтар оса ҡыйпылышып.* Ғ. Әмири.

**ҠЫЙПЫС** [1] *с. кар.* **ҡыйпысыҡ.**

**ҠЫЙПЫС** [2] *и.* Ҡыйып ҡырҡып алынған киҫәк; ҡырҡынды, ҡыйпылсыҡ.

**ҠЫЙПЫСЛАНЫУ** *к. кар.* **ҡыйпысыҡланыу.**

**ҠЫЙПЫСЫҠ** *с.* Төрләсә борғоланған булып ҡыланыусан; ҡылансыҡ, ҡыйпанлаҡ, ҡыйпыс. *Ҡыйпысыҡ ҡыҙ.*

**ҠЫЙПЫСЫҠЛАНЫУ** *к.* Төрләсә борғоланған булып ҡыланыу; ҡыйпысыҡ булыу. *Майсафа ҡыйпысыҡланып, борғоланып коридорға сығып китә.* К. Кинйәбулатова.

**ҠЫЙПЫТЫУ** *к.* **1.** Бер ситтән ҡыя тартып сабыу йәки ҡырҡыу. *Ҡыйпытып ҡырҡыу.* ■ *[Айбулат] сөсө икмәктең бер ситен ҡыйпытып алып ҡапты.* Һ. Дәүләтшина.

**2.** Бер ситкә ҡыялатыу. *Шәлде ҡыйпытып ябыныу.*

**3.** Бер яҡҡа янтайыу, ҡыялау. *Ҡыйпытып осоп китеү.* ■ *Һабан тағы ситкә ҡыйпытып сығып китә. Сей ҡала.* Ж. Кейекбаев.

**ҠЫЙПЫУ** *к.* **1.** Ҡыя тартып, ситтән йәки остан ҡырҡыу; уя ҡырҡыу, өҙә ҡырҡыу; ҡыйыу. *[Таңдысаның] малдары юл ситендәге үлән баштарын ҡыйпып ашап бара.* «Ҡуңыр боға». *Кирәй Мәргән дейеүҙең башын ҡыйпыған да төшөргән, ти* (Әкиәттән).

**2.** Бер ситкә ҡыялатыу. *Ташты ҡыйпып ебәреү.* ■ *Бөркөт әсә ҡанат ҡыйпып япҡан .. балаһын.* К. Кинйәбулатова.

**ҠЫЙРАЛЫУ** *к.* **1.** Ватылыу; емерелеү. *Тәҙрә быялалары ҡыйралып төштө.* ■ *Ҡыйралды ҡала, заводтар, үртәлде ялан, иген.* Р. Ниғмәти.

**2.** Яраҡһыҙ хәлгә килеү; боҙолоу. *Ыңғырсаҡ аяҡ аҫтына төшкән дә тапалып, ҡыйралып бөткән.* Б. Бикбай.

**3.** *күсм.* Арып ныҡ ҡаҡшау. *Бөтә кәүҙә ҡыйралып төшөп бара, аяҡтар ойоған.* Д. Юлтый. *Эт һымаҡ әлһерәп, ҡыйралып, станцияға барып еттеләр.* И. Насыри.

**4.** Тар-мар ителеү, юҡҡа сығыу. *Ҡыйралған ғәскәр.* ■ *Күсәк әйтә: «Илама һин боҙоп төҫөң, бөтә ырыуың ҡыйралғанда берәү өсөн».* «Бабсаҡ менән Күсәк».

**ҠЫЙРАЛЫШ** *и.* Яу, һөжүм һөҙөмтәһендә барлыҡҡа килгән һәләкәт. *Ошо тирәлә аҙна-ун көн элек кенә үлемесле ҡыйралыштар булған.* Ф. Иҫәнғолов.

**ҠЫЙРАЛЫШЫУ** *к.* **1.** *урт. кар.* **ҡыйралыу.** *Бөтә нәмә ҡыйралышып ята.*

**2.** Пыр туҙыу, зыҡ ҡубыу. *Беҙҙең .. ҡыйралышып үйнап йөрөгән сағыбыҙ.* Х. Назаров.

**ҠЫЙРАТЫЛЫУ** *к. төш. кар.* **ҡыйратыу.** *Артиллерия уты менән дошмандың дүрт пулемёт нөктәһе һәм өс автомашинаһы ҡыйратылды.* Ә. Ихсан. *Ҡыйратылған урманымда ҡоштар әле оя ҡора.* М. Кәрим.

**ҠЫЙРАТЫУ** *к.* **1.** Ватыу; емереү. *Төн булһын, тине фашистар, ҡыйратты Днепрогэсты.* Р. Ниғмәти. *Мин, бер ҡатлы, кеше көлдөрәм тип, күҙҙе бәйләп, көршәк ҡыйраттым.* М. Кәрим.

**2.** Яраҡһыҙ хәлгә килтереү; боҙоу. *[Көрән бейә] арбаны ҡоҙоҡ бураһына бәреп ҡыйрата яҙҙы.* З. Биишева.

**3.** Ҡырып, таратып, тар-мар итеү. *Дошман ғәскәрен ҡыйратыу. Яу ҡыйратыу.* ■ *Мин ҡыйраттым дошман сафтарын.* Салауат Юлаев. *Илен яулап яу сапҡан, ил дошманын ҡыйратҡан батырҙар килә, һай кем* (Халыҡ йырынан).

**4.** *күсм.* Мул итеп, күҙгә күренерлек итеп ниҙер башҡарыу. *Ял ваҡытында ниндәй эш булһын, әллә ни ҡыйратҡан юҡ.* М. Тажи.

♦ **Эш ҡыйратыу** *шул уҡ* **донъя ҡыйратыу** (*кар.* **донъя**).

**ҠЫЙРАУ** *к.* **1.** Хараба хәленә килеү; емерелеү, ҡыйралыу. *Егет алмас ҡылысын бер һелтәгән икән, дейеүҙең алтын һарайҙары ҡыйрап төшкән, ти* (Әкиәттән). *Ватылды тәҙрә шырт итеп, шырт ҡына түгел шул, ул бит ҡыйрай сылтырт итеп.* Ш. Бабич.

**2.** Яраҡһыҙ хәлгә килеү; боҙолоу. *Ирйегеттең кәмәһен өйөрмә ел әйләндерә килтереп .. ҡаяға һуҡҡан. Кәмә ҡыйраған.* З. Биишева.

**3.** Тар-мар булып, ҡырылып, юҡҡа сығыу. *Ғәскәр ҡыйраны.* ■ *[Гэрэй] атаһының ҡыйрап барған донъяһын тау үренә тәгәрләтеп ебәрә.* Б. Бикбай.

**ҠЫЙ-СЫЙ** *окш. диал.* Сыр-сыу. *Ҡый-сый килеү.*

**ҠЫЙСЫҠ** *и.* Ҡаҙыҡ теш.

**ҠЫЙСЫЛЫУ** *к. диал.* Ҡыйпылыу.

**ҠЫЙСЫТЫУ** *к. диал.* Ҡыйпытыу.

**ҠЫЙСЫУ** *к. диал.* Ҡыйпыу. *Ҡыйсып алыу.*

**ҠЫЙТАЙТЫУ** *к.* **1.** Ҡапыл ҡырынайтыу. *Сананы ҡыйтайтыу.*

**2.** *күсм.* Ҡапыл үсектереү; ҡылтайтыу. *Кешене ҡыйтайтыу.*

**ҠЫЙТАЙЫУ** *к.* **1.** Ҡапыл ҡырынайыу; ҡыйшайыу. *Йөк ҡыйтайҙы.*

**2.** *күсм.* Ҡапыл үсегеү; ҡылтайыу. *Буштан-бушҡа ҡыйтайма.*

**ҠЫЙТАЙЫШЫУ** *к. урт. кар.* **ҡыйтайыу.** *Ҡыйтайышып китеү.*

**ҠЫЙҒАНЛАУ** *к.* Күҙ-башты уйнатып, һырғаланыу; ҡылансыҡланыу. *Яман ҡатын шул булыр: ауыҙы-башы останлап, аҫау кирҙәй ҡыйғанлап .. ултырыр* (Йола йырынан).

**ҠЫЙТАР** *с. диал.* Өркәк. *Бик ҡыйтар һәүерек, байҡабыраҡ йөрө.*

**ҠЫЙТЫҠ** *с. диал.* **1.** Ҡыйпысыҡ.

**2.** Ҡылтым. *[Гөлйөҙөм:] Ошо Яланбикә булһа, уйнағанды күтәрмәҫ. Бигерәк ел теймәҫ ерәнсәһең, ҡыйтыҡ.* Һ. Дәүләтшина.

**3.** Өркәк.

**ҠЫЙХЫТ** [*ғәр.*] *и. диал.* Ҡытлыҡ, йот. *Егерме беренсе йылғы ҡыйхыт. // [Ниса:] Анауындай ҡыйхыт йылдарҙан һуң егет заты ҡалдымы?* С. Кулибай.

**ҠЫЙХЫТСЫЛЫҠ** *и. диал.* Ҡытлыҡ.

**ҠЫЙ-ҺАЙ** *и. йыйн.* **1.** Йыйын юҡ-бар ташландыҡ нәмә; сүп-сар. *Йылғаны ҡый-һай менән тултырыуға, бысратыуға .. юл ҡуймаҫҡа кәрәк.* «Совет Башҡортостаны», 1966, 15 ғинуар.

**2.** *с. мәғ. күсм.* Ҡулынан йүнле эш килмәгән

булдыҡһыҙ (кешеләргә ҡарата). *Ҡый-һай түрәләр инде өйҙә генә ултырып ҡалыуға күнәгәтләнмәне.* Т. Хәйбуллин.

**ҠЫЙШАЙТЫЛЫУ** *ҡ. төш. ҡар.* **ҡыйшайтыу.**

**ҠЫЙШАЙТЫУ** *ҡ.* Ҡыйыш хәлгә килтереү; ҡырынайтыу. *Башты ҡыйшайтыу. Кәүҙәне ҡыйшайтыу. Ҡыйшайтып баҫыу.*

● *Маҡтансыҡ мыйығын тырпайтыр, алдаҡсы ауыҙын ҡыйшайтыр.* Әйтем.

**ҠЫЙШАЙЫУ** *ҡ.* **1.** Ҡыйыш хәлгә килеү; ҡырынайыу. *Ҡапҡа ҡыйшайған. Мейес ҡыйшайған.* ■ *[Тимер] үксәләре ҡыйшайып бөткән итеген тиҙ генә кейҙе.* Б. Бикбай. *Түбәһе туҙған, мөйөштәре ҡыйшайған, бер яҡҡа стенаһы терәтелгән был клубты күреп Кәримдең эсе бошто.* Я. Хамматов.

**2.** *күсм.* Ҡапыл үпкәләү, үсегеү; ҡылтайыу. *Ҡыйшайып йөрөй бирһен тәкәбберҙәр.* Аҡмулла.

**ҠЫЙШАЙЫШЫУ** *ҡ. урт. ҡар.* **ҡыйшайыу.**

**ҠЫЙ-ШАҠЫР** *и. йыйн. диал.* Ҡый-ҡыпыр, шаҡы-шоҡо. *Өйөндә һис йүнле нәмә юҡ, гел ҡый-шаҡыр.*

**ҠЫЙШАНЛАҠ** *с.* **1.** Ҡыйшанлап торған. *Ҡыйшанлаҡ ултырғыс.*

**2.** *күсм.* Ҡыйшанларға яратыусан. *Ҡыйшанлаҡ ҡатын.*

**ҠЫЙШАНЛАТЫУ** *ҡ.* Төрлө яҡҡа аушайтыу. *Өҫтәлде ҡыйшанлатыу.* / Төрлө яҡҡа борғослау. *Усман кәүҙәһен ҡыйшанлатты.* Я. Хамматов.

**ҠЫЙШАНЛАУ** *ҡ.* **1.** Төрлө яҡҡа аушайыу, ҡыйыш-мыйыш килеү. *Өҫтө ябылмаған оҙон ағас өҫтәл артына аяҡтары ҡаҡшап, тейер-теймәҫтән ҡыйшанлап торған оҙон эскәмйә килтереп ҡуйҙылар.* И. Насыри. / *күсм.* Төрлө яҡҡа борғосланыу. *Тулыбай улай-былай ҡыйшанлап ҡараны, тамаҡ ҡырып, үҙен Ҡыныҡтың иҫенә төшөрөргә маташты.* Ғ. Дәүләтшин. *[Әлмәт:] Түрә ҡушҡас, ут эсенә лә инерһең, ҡыйшанлап тороу оҡшамай, Гөлйемеш килен.* Б. Бикбай.

**2.** *күсм.* Күҙҙе, башты уйнатып, һырғаланыу, ҡылансыҡланыу. *Өйҙә бик матур ҡыҙ ултыра, ти. «Хуш килдең?» — тигән була, ти, ҡыҙ ҡыйшанлап* (Әкиәттән).

**ҠЫЙШАН-МЫЙШАН** *оҡш.* **1.** Төрлө яҡҡа аушайып, ҡыйыш-мыйыш килгән хәрәкәтте белдергән һүҙ. *Ҡыйшан-мыйшан итеү.*

**2.** *күсм.* Күҙҙе, башты уйнатып, борғоланған ҡылыҡты белдергән һүҙ. *Ҡыйшан-мыйшан килеү.*

**ҠЫЙШЫҠ** *с. диал. ҡар.* **ҡыйыш** 1.

**ҠЫЙЫҒАЙЫУ** *ҡ. ҡар.* **ҡыйшайыу.** *Ҡыйығайған өй.*

**ҠЫЙЫҠ** [1] *с.* **1.** Ҡыя йүнәлешле. *Эре ҡайын араһында .. ҡояштың һуңғы ҡыйыҡ нурҙары күренде.* Я. Хамматов. / Ҡыя ҡырҡылған мөйөшлө. *Ҡыйыҡ һалма. Ҡыйыҡ яулыҡ.* ■ *Өй түбәһе ҡыйыҡ таҡта, баҫа алмайҙыр күгәрсен* (Халыҡ йырынан).

**2.** Бер яҡҡа ҡырын; ҡыйыш. *Ҡыйыҡ ауыҙ. Ҡыйыҡ тәҙрә.* ■ *Урҙым ураҡ, ҡуйҙым ҙурат, ҙуратым ҡыйығырак* (Халыҡ йырынан). / *күсм.* Дөрөҫлөккә ярашһыҙ; хата, яңылыш. *Ҡыйыҡ аҙым. Ҡыйыҡ юл. Ҡыйыҡ эш.* // *Ҡыйыҡ атлау. Ҡыйыҡ тороу. Ҡыйыҡ ятыу.*

◆ **Ҡыйыҡ ҡарау** *шул уҡ* **ҡырын күҙ менән ҡарау** (*ҡар.* **күҙ**).

● *Ҡыйыҡ булһа ла өй булһын, ҡарт булһа ла ир булһын.* Әйтем. *Уйы ҡыйыҡтың уғы ҡыйыҡ.* Әйтем.

**ҠЫЙЫҠ** [2] *и.* **1.** Йорт, ҡаралтының ян-яҡҡа һарҡыулап эшләнгән түбә ябыуы. *Өй ҡыйығы. Ҡыйыҡ башы. Ҡыйыҡһыҙ һарай.* ■ *Ҡыйыҡ ситенән ағып төшә торған һыуҙарҙы ебәрмәҫ өсөн ҡалай ҡубағалар ҡуйылған ..* Ғ. Дәүләтшин. **Ел ҡыйыҡ** ике яғы асыҡ ҡыйыҡ. / *күсм.* Көн итер торлаҡ; өй. *[Ғилуан:] Беҙ, Мәликә, бер тамырҙан, һинең әле ҡыйығың бар һаҡланырға ел-ямғырҙан.* Н. Нәжми.

**2.** *диал. ҡар.* **ҡыра** [1] 1.

**ҠЫЙЫҠ** [3] *и.* Ҡыя ҡырҡып алынған туҡыма киҫәге. *Ҡыйыҡ ҡуйып тегеү.*

**ҠЫЙЫҠ** [4] *с. диал.* Ҡылый.

**ҠЫЙЫҠ** [5] *с. диал.* Кейек, ҡырағай. *Ҡыйыҡ мал.*

**ҠЫЙЫҠ** [6] *р. диал.* Ҡапыл.

**ҠЫЙЫҠБАШ** *и. диал. ҡар.* **сүрәкә** [1].

**ҠЫЙЫҠ-ҠЫМТЫҠ** *и. йыйн.* Ниҙәндер сығып, һалынып торған урындары. *Биккужа йылы ҡулы менән битен һыйпап, ҡолағын ышҡыны, бүрегең батырыбыраҡ кейҙе. Ҡыйыҡ-ҡымтыҡтарын ҡыҫтырҙы.* Т. Килмөхәмәтов.

**ҠЫЙЫҠЛАТЫУ** *ҡ. йөкм. ҡар.* **ҡыйыҡлау.** *[Миңлебай:] Мин ҡола бейәне һатам да барыбер өйҙө ҡыйыҡлатам.* Т. Йәнәби.

**ҠЫЙЫҠЛАУ** *ҡ.* Ҡыйыҡ [2] (1 мәғ.) яһап, ҡыйыҡлы итеү. *Өйҙө ҡыйыҡлап ябыу.*

**ҠЫЙЫҠ-МЫЙЫҠ** *с. ҡар.* **ҡыйыш-мыйыш.**

**ҠЫЙЫҠСА** [1] *и.* Дүрткел аҡлы ситсаға сәскә төшөрөп, ҡулдан эшләнгән яулыҡ. *Ҡыйыҡса ташлап, таҫтар бәйләр йәшкә етмәһә лә, бите, нуҗа менән баҫылған күҙҙәре уны [Ғәззә әбейҙе] ҡарт күрһәтә.* Һ. Дәүләтшина.

**ҠЫЙЫҠСА** [2] *и. диал.* Ҡош теле (*ҡар.* **ҡош**).

**ҠЫЙЫҠҺЫТЫУ** *ҡ. диал.* Ҡыйырһытыу.

**ҠЫЙЫҠҺЫУ** *ҡ. диал.* Ҡыйырһыу.

**ҠЫЙЫЛДЫРЫУ** *ҡ. ҡар.* **ҡыйылтыу.**

**ҠЫЙЫЛТЫУ** *ҡ.* **1.** Ҡыя ғына итеп һыҙыу. *Ҡыйылтып һөрмә тартыу.*

**2.** Ҡыя ҡырҡыу. *Ҡыйылтып сабып өҙөү.*

**ҠЫЙЫЛЫУ** *ҡ.* **1.** *төш. ҡар.* **ҡыйыу** [1] 1. *Йәшен һымаҡ булып беҙ үткәндә, дошман башы оса ҡыйылып.* Ғ. Әмири.

**2.** Ҡыя ғына булып һыҙылыу, һуҙылыу. *Ҡыйылып төшкән ҡояш нуры.* ■ *Пинжәк яғаһынан крахмаллы ҡулдәге ҡыйылып күренә.* С. Агиш. *Күҙ күреме ерҙән ҡыйғыр яландар .. күренә, күк арҡалар ҡыйылып ята.* Ж. Кейекбаев. *Ҡашыкүҙе ҡыйылған бер һылыуым бар ине* (Халыҡ йырынан).

**3.** Ҡыя ҡырҡылыу, өҙә ҡырҡылыу. *Эргәмдәге яңғыҙ гөлдөң бер япрағы төшкән ҡыйылып* (Халыҡ йырынан).

**4.** *диал.* Кәйелеү.

◆ **Бәгер ҡыйылыу** *ҡар.* **бәгер.**

**ҠЫЙЫЛЫШЫУ** *ҡ. ҡар.* **ҡыйылыу.** *Ҡашың, күҙең ҡыйылышып, кем бәхетенән үҫәһең?* (Халыҡ йырынан).

**ҠЫЙЫМ** [1] *и. диал.* Яңылышлыҡ. *Кешенең ҡыйымын ғына эҙләйһең дә йөрөйһөң инде.*

**ҠЫЙЫМ** [2] *и. диал.* Үлтереш. *Бәгзе бер ерҙә үлем дә ҡыйым.*

**ҠЫЙЫН** *с.* Ҡатмарлы һәм яфалы, ауыр; *киреће* анһат. *Ҡыйын мәсьәлә. Ҡыйын тормош. Ҡыйын хәл. Ҡыйын эш.* ■ *[Ҡыҙ] тауышын ҡыйын итеп сығарҙы, ул был минутта иларға яҡынлаша, күҙҙәренә мөлдөрәп йәш йыйыла ине.* С. Агиш. *Ғашиҡ булыу хәле ҡыйын икән, баҫып ҡына алды йөрәкте* (Халыҡ йырынан). *Егеттең яңғыҙына башта бик ҡыйын була* (Әкиәттән). // *Йылҡы көтөүсеһе өсөн иң ҡыйыны — көҙ.* Ҡ. Ибәтуллин.

**ҠЫЙЫНАЙЫУ** *к. ҡар.* **ҡыйынлашыу.**

**ҠЫЙЫНДЫ** *и. диал.* **1.** *ҡар.* **ҡырҡынды** [1].

**2.** *ҡар.* **сарлаҡ** [1].

**ҠЫЙЫН-ҠЫҪТАУ** *и. йыйн.* Ҡыйын һәм ҡыҫтау хәл; ауырлыҡ. *Ошо арала кеше баҫып, ҡыйын-ҡыҫтау булып китте.*

**ҠЫЙЫНЛАШТЫРЫУ** *к.* Ҡыйын итеү; ауырлаштырыу.

**ҠЫЙЫНЛАШЫУ** *к.* Ҡыйынға әйләнеү, ҡыйын булыу; ауырлашыу. *Кейем-һалым йүнәтеү ҡыйынлашты.* Т. Кусимов.

**ҠЫЙЫНЛЫҠ** *и.* Яфалы, ҡатмарлы хәл; ауырлыҡ; *киреће* анһатлыҡ. *Ҡыйынлыҡ кисереү. Ҡыйынлыҡҡа түҙеү. Ҡыйынлыҡта ҡалыу.* ■ *Мин һөйләп бөтөргөһөҙ ҡыйынлыҡтар күреп, ҡыш уртаһынан көҙгә тиклем бер ҡаҙаҡ ауылында балалар уҡытып, .. Ырымбурға ҡайттым.* Т. Йәнәби.

**ҠЫЙЫНЛЫҠҺЫҘ** *с.* Анһат, еңел. *Ҡыйынлыҡһыҙ тормош.* // *Ҡыйынлыҡһыҙ эшләү. Маҡсатҡа ҡыйынлыҡһыҙ ирешеү.*

**ҠЫЙЫНСЫЛ** *с. диал.* Ҡыйыуһыҙ, баҙнатһыҙ.

**ҠЫЙЫНСЫЛЫҠ** *и. ҡар.* **ҡыйынлыҡ.** *Буран, һыуыҡ булып, бик ҡыйынсылыҡ менән өйгә ҡайтып етте.*

**ҠЫЙЫНҺЫНЫУ** *к.* Ҡыйын күреү, ҡыйынға һанау. *«Әгәр ҡыйынһынһаң, үҙем генә ҡайтып киләм»,— тине Сәлмән. «Юҡ, ҡыйынһынам тип әйтмәйем, тик иртәгә экзамен түгел бит әле».* Ә. Вахитов.

**ҠЫЙЫНҺЫРАУ** *к. ҡар.* **ҡыйынһыныу.**

**ҠЫЙЫР** *и.* Бөтөн икмәк ситенән телеп алынған киҫәк. *Икмәк ҡыйыры. Бер ҡыйыр икмәк.*

**ҠЫЙЫРҺЫТЫУ** *к.* Һыйҙырмай, үҙ итмәй рәнйетеп, ситкә тибеү; ситләтеү. *[Варис:] Ярар, ҡыйырһытһағыҙ, мин Хариска ауылдан ситтә лә эш табырмын.* Н. Мусин. *Әлдә Айсыуаҡ бар. Ул малайҙарға Миңлегөлдө ҡыйырһытырға бирмәй әле.* Т. Килмөхәмәтов.

**ҠЫЙЫРҺЫУ** *к.* Үҙеңде сит итеп, кәм итеп тойоу; ситһерәү. *Ҡайҙа ауыр — шунда баҫтым яныл, баҙанманы күңел ҡыйырһып.* К. Кинйәбулатова.

**ҠЫЙЫУ** [1] *к.* **1.** Үткер нәмә менән уя ҡырҡыу, өҙә ҡырҡыу. *Ҡыйып алыу. Ҡыйып төшөрөү.* ■ *Бер мәләк күкте тишеп алды уйып, түп-түңәрәк дүңгәләк төҫлө ҡыйып.* Ш. Бабич. *Күк көмбәҙе күм-күк быяла, ниндәй оҫта уны ҡыя ала!* Р. Ғарипов. *Батша булһа ла Бүгәсәү .. баяр башын ҡыя икән, һанат башын ҡыя икән.* Салауат Юлаев. *[Ҡуҙыйкүрпәс:] Ҡарлуғас үтмәҫ ҡара урманды ҡылысым менән ҡыйып үтермен, әсәй.* «Ҡуҙыйкүрпәс менән Маянһылыу».

**2.** *күсм.* Үлтереп, ҡырып, юҡ итеү. *Дошманды ҡыйыу.* ■ *Рәшит Аҙнабаев өс фашисты ҡыйған.* С. Әлибаев. *Булаттан үткер яу ҡыйыр* (Ҡобайырҙан).

**3.** *күсм.* Шыҡҡыйып килеп тотоу; тибеү. *Ыласын да оса, ҡошто ҡыя, ҡанаттары талғас, бер төшә.* Салауат Юлаев. / *күсм.* Күп итеп эләктереү. *Эй, ҡыям да инде балыҡты.*

**4.** *күсм.* Арҡыры килеп, алдан үтеү; киҫеү, ҡырҡыу. *Берәү выжт итеп алдымды ҡыйып сыҡты.* В. Нафиков. *Юлды ҡыйып үткән ҡоралайға ауыҙ асып ҡалам.* М. Хәй.

**5.** *күсм.* Иҫәпкә алмау, кире ҡағыу. *Атаһы Фатиманың үтенесен ҡыя алмай, ел арба эшләтте, ти* (Әкиәттән).

◆ **Йәнде ҡыйыу** *ҡар.* йән 1. **Күҙ ҡыйыу** *шул уҡ* **күҙ ҡыҙыу** (*ҡар.* **күҙ**). **Ҡанатты ҡыйыу** *ҡар.* **ҡанат. Тел дә ҡыймау** һис тә үтмәү, бик үтмәҫ булыу. *[Рәхимә:] Тел дә ҡыймай башланы бысағым.* Һ. Дәүләтшина.

**ҠЫЙЫУ** [2] *к.* Батырсылыҡ, баҙнатсылыҡ итеү. *Ҡыймай йөрөү. Ҡыя алмау. Һорарға ҡыймау. Әйтергә ҡыймау.* ■ *[Мәк:] Һеҙ нисек ҡыйып беҙҙең менән һөйләшәһегеҙ.* М. Фәйзи. *Ос һин дә, минең йырым, бөркөт ҡыйып менмәҫ ергә.* Ғ. Әмири.

◆ **Ҡыйып баҡҡыһыҙ** *шул уҡ* **ҡыйып ҡарағыһыҙ** (*ҡар.* **ҡарау**). **Тел ҡыймау** һүҙ әйтергә батырсылыҡ итмәү.

**ҠЫЙЫУ** [3] *к. диал.* Ҡайыу, ҡырпыулау.

**ҠЫЙЫУ** [4] *к. диал. ҡар.* **ҡыйыҡлау** [1].

**ҠЫЙЫУ** [5] *с.* **1.** Тартынып, оялып тормаусан; баҙнатсыл. *Ҡыйыу булыу.* // *Ҡыйыу һөйләшеү.* ■ *Ҡыйыу бала үҙе килеп ала Зәйнәп ҡулындағы сәскәне.* Ғ. Сәләм. *Ишектән ингән кеше хужа һымаҡ ҡыйыу атлап, түргә барып ултырҙы.* Б. Бикбай.

**2.** Ҡурҡыу белмәҫ йөрәкле; батыр. *Ҡыйыу егет.* ■ *Исмәғил ҡыйыу малай. Еңел генә шөрләп төшөрлөк түгел.* Я. Вәлиев. / Ҡурҡыуһыҙ, тәүәккәл кешегә хас. *Ҡыйыу аҙым. Ҡыйыу теләк.* ■ *Новиковтың был ҡыйыу һүҙе крәҫтиәндәргә бик оҡшаны.* Д. Юлтый.

**ҠЫЙЫУЛАНДЫРЫУ** *к.* **1.** Ҡыйыуға әйләндереү, ҡыйыу итеү; батырайтыу. *Был һүҙ мине ҡыйыуландырып ебәрҙе.*

**2.** *эйһ. ф. ҡар.* **ҡыйыуланыу.** *Нисәмә йылдар ошо эштә эшләп ҡыйыуландырған инде хәҙер.*

**ҠЫЙЫУЛАНЫУ** *к.* Ҡыйыуға әйләнеү, ҡыйыу булыу; батырайыу. *Ғәләү элек бик йыуаш булһа ла хәҙер батырланып, ҡыйыуланып китте.* Т. Йәнәби.

**ҠЫЙЫУЛАУ** *к. диал.* Ҡаймалау, ҡырпыулау.

**ҠЫЙЫУЛЫҠ** [1] *и.* Ҡурҡыуһыҙлыҡ, тәүәккәллек сифаты; батырлыҡ. *Ҡыйыулыҡ күрһәтеү.*

● *Ҡыйыулыҡ — ярты ырыҫ.* Әйтем.

**ҠЫЙЫУЛЫҠ** [2] *и. диал. ҡар.* **ҡырпыу** 1.

**ҠЫЙЫУҺЫҘ** *с.* Тартынып, оялып тороусан; баҙнатһыҙ. *Ҡыйыуһыҙ бала. Ҡыйыуһыҙ булыу.* // *Ҡыйыуһыҙ ғына өндәшеү.* ■ *Ул [Гәрәй] йөҙөнә меҫкенлек сығарып, ҡыйыуһыҙ ғына һөйләй башлаған булды.* Б. Бикбай.

**ҠЫЙЫУҺЫҘЛАНЫУ** *к.* Ҡыйыуһыҙға әйләнеү, ҡыйыуһыҙ булыу. / Оялып тартыныу, уңайһыҙланыу. *Ятаҡ коридорының тәҙрә төбөндә күргәс, ҡыйыуһыҙланып ҡына янынға килдем.* Н. Нәжми.

**ҠЫЙЫУҺЫҘЛЫҠ** *и.* Ҡурҡаҡлыҡ, оялсанлыҡ сифаты. *Ир кешенең бындай ҡыйыуһыҙлыҡ күрһәтеүе, билдәле, Фатимаға оҡшап етмәне.* Б. Бикбай.

**ҠЫЙЫШ** *с.* **1.** Тура йүнәлешкә, төҙ рәүешкә ярашһыҙ; кәкре, салыш, ауыш *Ҡыйыш мөрйә. Ҡыйыш тәҙрә.* ■ *Ҡыйыш ситән, уны көрттәр күмгән.* Р. Ниғмәти. // *Ҡойроҡ төрөп, ҡыйыш юртып, Ҡашҡар юл башлап бара.* С. Кулибай.

**2.** *күсм.* Дөрөҫлөккә ярашһыҙ; яңылыш. *Тормоштағы ҡыйыш юлдарҙы йүнәтеп, тура бер эҙгә һалып ебәрергә кәрәк.* Һ. Дәүләтшина.

◆ **Ҡыйыш тейәү** эсеп алыу.

● *Ауыҙың ҡыйыш булһа, көҙгөгә үпкәләмә.* Әйтем. *Ҡыйыш ултырһаң да тура һөйлә.* Әйтем.

**ҠЫЙЫШБАШ** *и. диал.* Тырпыса кендеге.

**ҠЫЙЫШҠА** *и. диал.* Ҡойошҡан.

**ҠЫЙЫШ-МЫЙЫШ** *с.* Төрлө яҡҡа, төрлөсә ҡыйыш; кәкре-бөкрө. *Ҡыйыш-мыйыш өҫтәл.* // *Ҡыйыш-мыйыш атлау. Ҡыйыш-мыйыш күйыу.*

**ҠЫЙЫШТЫРЫУ** *к. йөкм. кар.* **ҡыйышыу** 1, 2. *Кешеләрҙе үҙ-ара ҡыйыштырыу.*

**ҠЫЙЫШЫУ** *к.* **1.** Үткер ҡорал менән ҡара-ҡаршы һуғышыу. *Бикбай менән Ҡуйсар ҡылыс менән ҡыйышҡанда [Йәмилә] урындыҡ аҫтына инеп йәшенә.* «Бабсаҡ менән Күсәк».

**2.** *күсм.* Үҙ-ара тартҡылашып, көрәшеп, еңешеү. *Янып ғауғалаштым, кәрәк саҡта ҡыйыштым, талаштым.* Й. Солтанов.

**3.** *күсм.* Ниҙер эшләргә көсөргәнеп тырышыу; ныҡышыу. *Аҙыҡ етерлек. .. Әлегә төҙөлөш тип ҡыйышабыҙ.* Р. Низамов.

**ҠЫҠАЙ** *и. һөйл.* Ҡаҡай.

**ҠЫЛ** *и.* **1.** Аттың ялы, ҡойроғондағы сәсе. // *Ҡыл арҡан. Ҡыл дилбегә. Ҡыл иләк.* ■ *Ана бер ерҙә тире бесеп, ат ҡылы менән теғеп ултыралар.* Ш. Шәһәр. *[Толпар:] Өс бөртөк ҡылымды ал да үҙемде ебәр. Кәрәк саҡта шуны өтөп, мине саҡырырһың* (Әкиәттән). / Ҡайһы бер хайуандарҙың шырт йөнө. *Кәзә ҡылы.*

**2.** Музыка ҡоралының сиртә торған ебе. *Думбыра ҡылы. Скрипка ҡылы.* ■ *Бабич .. мандолинаның ҡайһылыр ҡылдарын көйләп алғас, тотош шыңғыратып бер нисә тапҡыр сиртеп ҡараны ла уйнарға кереште.* С. Ҡудаш.

◆ **[Кемдеңдер] ҡылын тартып [***йәки* **сиртеп] ҡарау** [кемдеңдер] уйын, ниәтен, яйын белер өсөн ситләтеп һөйләшеү. *[Әбей:] Ярар, Зыя балаҡай, Сәгиҙәнең ҡылын тартып ҡарармын, ауыҙға һуҡмаҫ әле. Шунан һиңә ҡәйнә булып та ҡуйырмын, бәлки.* М. Тажи. **Ҡыл да ҡыбырлатмау** бер ниндәй эш эшләмәй тик йөрөү. *[Сәфәр:] Ай эттәгенәһе, аптырамағыҙсы юҡҡа! Ҡыл да ҡыбырлатмай нисек түҙеп ятмаҡ кәрәк.* Х. Назаров. **Ҡылды ҡырҡҡа ярыу** төрлө яраҡлы-яраҡһыҙ юлдар менән мөмкин булмаҫтай нәмәләрҙе эшләү. *Әскәпъямал еңгә иҫән саҡта ҡылды ҡырҡҡа ярған, эшләмәгән эше ҡалмаған.* Ә. Вәли. **Ҡыл өҙөрлөк тә хәл ҡалмау** тамам арып, тамам хәлһеҙ булыу. *Шундай арыған саҡтар була: ҡыл өҙөрлөк тә хәл ҡалмай. Саҡ һөйрәлеп ҡайтып етәһең дә урындыҡҡа ауаһың.* И. Ғиззәтуллин. **Ҡыл өҫтөндә** бик хәүефле хәлдә. *[Индрил:] Егеттәр, .. беҙҙең хәлде беләһегеҙ бит, ҡыл өҫтөндә йөрөйбөҙ.* Д. Юлтый. **Ҡыл тамаҡ** *кар.* **тамаҡ. Ҡыл тартҡан кеүек** төп-төҙ. *Юл ни берәү инде — ҡыл тартҡан кеүек.* Ж. Кейекбаев.

● *Ҡыҙ намыҫы ҡыл өҫтөндә, ҡылдан төшһә — юл өҫтөндә.* Мәҡәл.

**ҠЫЛА** *и. иҫк.* Ер, хужалыҡ, төрлө килем иҫәбенән дәүләт алған түләү; яһаҡ, һалым. *[Генерал:] Бына һеҙҙә бик күп ер бар. Бер ҙә файҙаһыҙ айыу йөрөп ятҡан ер өсөн көс еткеһеҙ ер ҡылаһы түләйһегеҙ* (Әкиәттән).

**ҠЫЛАМЫҠ** *и. диал.* Ҡыҙыл шәшке (*кар.* **шәшке**).

**ҠЫЛАНДЫРЫУ** *к.* **1.** Билдәле бер рәүештә эш иттереү, эшләтеү. *Иркен ҡыландырыу.*

**2.** Борғоландырып, ҡыйшан-мыйшан иттереү. *Сания .. ауыҙын ҡыйыш-мыйыш ҡыландырып, тәҙрә төбөндә көнбағыш ярып ултыра ине.* М. Тажи.

**3.** Улай-былай итеп ниҙер эшләү, йәтешләү, йүнләү. *Ҡатыны .. бер шешә араҡы килтереп, ашъяулыҡ ситенә ултыртты. «Ай, бисәкәй, юҡҡа ҡыландыраһың шул нәмәңде».* Б. Бикбай.

**ҠЫЛАНСЫҠ** *с.* Борғоланып, һырғаланып, төрлөсә ҡыланыусан. *Ҡылансыҡ ҡыҙ.* // *Ханым, яурынын ҡылансыҡ йыйырып, һиҙәптәй генә сәгәтенә күҙ төшөрөп алды.* Ф. Иҫәнғолов.

**ҠЫЛАНСЫҠЛАНЫУ** *к.* Кеше иғтибарын йәлеп итергә, оҡшарға тырышып, борғоланып-һырғаланып, төрлөсә ҡыланыу. *Һуңғы ваҡытта [Шәмсун] ниңә бик ҡылансыҡланып, һауалы һөйләшә башланы?* Н. Мусин.

**ҠЫЛАНЫУ** *к.* **1.** Билдәле бер рәүештә эш итеү, эшләү. *Иркен ҡыланыу. Һаҡ ҡыланыу.* ■ *Улай орҙо-бәрҙе ҡыланырға ярамай. Беҙ — коммунистар.* А. Карнай. *Мин дә маймыл кеүек, Новиков ни ҡыланһа — шуны ҡыланам.* Д. Юлтый.

**2.** Үҙен ниндәйҙер бер сифатта күрһәтергә тырышыу. *Эре ҡыланыу.* ■ *[Ниғмәтулла:] Ҡолсобайҙың Ҡолсобайы әллә кем булып ҡылана. Һуғыш байҙар өсөн генә файҙалы, тип ҡысҡыра.* Я. Хамматов. / Үҙен-үҙе тотоуҙа ниндәйҙер яһалмалыҡ күрһәтеү. *Ҡыйыуһыҙ булып ҡыланыу.* ■ *Гәрәй бай меҫкенләнгән булып ҡылана.* Б. Бикбай.

**3.** Кеше иғтибарын йәлеп итергә теләп, борғаланыу, һырғаланыу, ҡыйшан-мыйшан килеү. *Ҡыланып бейеү.* ■ *Ипле баҫып бейе лә, бейеүҙәрең килбәтһеҙ; әллә егет ояһаһың, ҡыланыуың ҡыйыуһыҙ* (Халыҡ йырынан).

**ҠЫЛАНЫШ** *и.* **1.** Эш ҡылыу рәүеше; ҡылыҡ. *Хисмәтулла .. айырылып китҡән Ҡолсобайҙың ҡыланышына төшөнә алмай, төрлөсә уйлап баш ватты.* Я. Хамматов. *Курмәй ҙә ул бүтәндәрҙе, ҡыланышы ҡоро. Үҙ күсәре тирәһендә әйләнә гел йыры.* Ғ. Рамазанов.

**2.** Үҙ-үҙеңде тотоу рәүеше; йөрөш, торош. *Рабфак студенттары уның [Саниәның] ҡыланышынан бот сабып көлә. Ә ул уның һайын һикеренә. Бер егетте, тоғона аҫылынып, артҡа тартып йыҡты.* М. Тажи. *Ул ҡатындың тәмһеҙ ашы, бик тә йәмһеҙ ҡыланышы.* Р. Басимов.

● *Ағас емешенән, әҙәм ҡыланышынан беленер.* Әйтем.

**ҠЫЛАУ** [1] *и.* Һыуыҡта ағасҡа һ. б. ҡунған ҡырау; бәҫ. *Кисә генә әле томан арҡаһында ҡылауланған ағастар, буран сапҡынынан ҡылауҙарын һелкеп, ергә ауната.* Т. Хәйбуллин. *Ҡараңғы төн, ҡышҡы саҫҡау һыуыҡ, ҡуйы урман ҡылау аҫтында.* Б. Вәлит.

**ҠЫЛАУ** [2] *и.* Күҙҙе ҡаплап һуҡырайтҡан шекәрә; аҡ. *Ҡылау төшөү. Ҡылау һалыу.* ■ *Ул [Серов] күҙҙең ҡылауын киҫеп ебәрҙе.* М. Хәйҙәров. **Ҡара ҡылау** күҙ яҫмағы тотош тоноҡланып, һуҡырайта торған ауырыу.

**ҠЫЛАУ** [3] *и.* Йәш малдың теленә сығып, имергә ҡамасаулап, эсен китәргән сабыртҡы. *Ҡылау булыу.*

**ҠЫЛАУЛАНЫУ** *ҡ.* Ҡылау, бәҫ менән ҡапланыу; бәҫләнеү. *Урмандар ҡылауланып ҡарға төрөнгән дә, төнгө йоҡоға сумған.* Т. Хәйбуллин.

**ҠЫЛАУЛАУ** [1] *ҡ.* Ҡылау, бәҫ менән ҡаплау; бәҫләү.

**ҠЫЛАУЛАУ** [2] *ҡ.* Аҡ шекәрә менән ҡапланыу, аҡ һалыу. *Күҙе ҡылаулаған.*

**ҠЫЛАУЛАУ** [3] *ҡ.* Тел сабыртмаһы менән ауырыу. *Ҡылаулаған ҡолон.*

**ҠЫЛАУЫР** [1] *и.* Тамаҡ, ҡолаҡ аҫты, муйын биҙҙәрендәге ағып торған шешек.

**ҠЫЛАУЫР** [2] *и.* Күгелйем япраҡлы, бер яҡлап ҡына теҙелеп торған күгелйем емешле үлән (тамырын ҡайнатып ҡылауыр ауырыуын дауалайҙар).

**ҠЫЛБАШ** *и.* Ғәҙәттә кешенең һуҡыр эсәгендә үрсей торған арт яғы йыуанырaҡ, баш яғы ҡыл һымаҡ нәҙек имгес ҡорт. *Бер кешеләге ҡылбаштың һаны .. бер-нисә меңгә етергә мөмкин.* В. Ғүмәров.

**ҠЫЛБЫР** *с. диал.* Тилбер.

**ҠЫЛБЫРБАШ** *и.* Ҙур һоло башлы, оҙон ҡыяҡ япраҡлы туғай үләне.

**ҠЫЛҒАН** *и.* Ялбырлап ултырған йөнтәҫ сал башлы ҡыяҡ үлән. *Дала ҡылғаны. Тау ҡылғаны.* ■ *Иң яҡшы ҡымыҙ ҡылған үләне ашап, .. ҙур һыулы ерҙә йөрөгән бейә һөтөнән яһала.* М. Ғөбәйҙуллин. *Яландағы ап-аҡ сәсле ҡылған үҫеп, ергә ҡарап әйелгән.* Б. Вәлит.

◆ **Ҡылған бәйләү** юлаусы төшөрә торған өй икәнен белдереү өсөн ҡапҡа башына ҡылған көлтәһе ҡуйыу. *Юл кешеһе ҡылған бәйләгән өйгә барып инер ине әүәле.* **Ҡылған сәс** аҡһыл һары йәки сал сәс. *Түңәрәк уртаһына ике ултырғыс ҡуйып, Ғәтиә апай менән ҡылған сәсле бер малай ултырҙы.* Т. Йәнәби.

**ҠЫЛҒАНЛЫ** *с.* Ҡылған үҫкән. *Ҡылғанлы дала.* ■ *Йылғаның һул яғында игe-сиге күренмәгән ҡылғанлы ялан.* Ғ. Сөләймәнов.

**ҠЫЛҒАНЛЫҠ** *и.* Ҡылған үҫкән ер. *Тәүҙә ҡылғанлыҡтарҙы уҙған егет, унан тау-таштарҙы ярып барған.* Ә. Вахитов.

**ҠЫЛҒОЙРОҠ** *и. шул уҡ* **ҡылғойроҡ өйрәк** (*ҡар.* **өйрәк 1**).

**ҠЫЛДАУ** *и. диал. ҡар.* **мәскәү** [1].

**ҠЫЛДЫЙ-БЫЛДЫЙ** *оҡш.* Быуынһыҙ һымаҡ тегеләй-былай хәрәкәтте белдергән һүҙ. *Ҡул-аяҡтар ҡылдый-былдый һелкенә.* Ш. Бабич.

**ҠЫЛДЫҠАЙ** *и. диал. шул уҡ* **ҡула ҡаҙан** (*ҡар.* **ҡула** [2]).

**ҠЫЛДЫРЫУ** *ҡ. йөкм. ҡар.* **ҡылыу.** *[Еңгәһе:] Юлдаш, һиңә бөгөн бата ҡылдыралар.* Һ. Дәүләтшина.

**ҠЫЛЙЕБӘК** *и.* Үләнде тотош сырмап, шуның һутын һурып үҫкән нәҙек кенә һабаҡлы япраҡһыҙ үҫемлек. *Етен ҡылйебәге. Кесерткән ҡылйебәге. Ҡомалаҡ ҡылйебәге.*

**ҠЫЛЙЫЛАН** *и.* **1.** Кешенең эсәк буйында була торған оҙон имгес селәүсен.

**2.** Һыуҙа йәшәй торған ҡыл һымаҡ нәҙек оҙон паразит селәүсен.

**ҠЫЛЙЫР** *и.. диал.* Йыланбалыҡ.

**ҠЫЛЙЫУ** *ҡ. диал.* Ҡылъяйыу.

**ҠЫЛЙЫУҒЫС** *с.* Һүҙе менән кешене юхалаған, телгә бөткән хәйләкәр. *Һин хәйләкәр шул, уны-быны белмәгән мине таҫма телең менән алдаштырып тик йөрөгәнһең, ҡылйыуғыс.* Р. Солтангәрәев.

**ҠЫЛЙЫУҒЫСЛАНЫУ** *ҡ.* Һүҙ менән кешене юхалау; таҫма телләнеү. *[Гәрәй:] Ярар, ярар, күп ҡылйыуғысланма, тиҙерәк билмәнеңде әҙерлә.* Б. Бикбай.

**ҠЫЛҠ** *оҡш.* Шыйыҡ нәмәне йотҡанда сыҡҡан тауышты белдергән һүҙ. *Һыуҙы ҡылҡ итеп йотоу.*

**ҠЫЛҠА** *киҫ. диал.* Һис. *Ҡылҡа хәлем ҡалманы.*

**ҠЫЛҠ-ҠЫЛҠ** *оҡш.* Ҡабат-ҡабат ҡылҡ иткән тауышты белдергән һүҙ. *Ҡылҡ-ҡылҡ итеп йотоу.*

**ҠЫЛҠЫЛДАТЫУ** *ҡ.* Ҡылҡ-ҡылҡ иттереү, ҡылҡ-ҡылҡ килтереү. *Ҡылҡылдатып йотоу.*

**ҠЫЛҠЫЛДАУ** *ҡ.* Ҡылҡ-ҡылҡ итеү, ҡылҡ--ҡылҡ килеү. *Шыптыр ҙа шыптыр шишмәнең шыптырлайҙыр ҙа сабағы; шунда ла торған кейәүҙең ҡылҡылдайҙыр ҙа тамағы* (Туй йырынан).

◆ **Тамаҡ ҡылҡылдау** *ҡар.* **тамаҡ.**

**ҠЫЛҠЫНЫУ** *ҡ.* Шыйыҡ нәмәне йотҡанда тамаҡты ҡылҡ-ҡылҡ иттереү. *Ҡылҡынып эсеү.* ■ *Уның [Муйылдың] ауыҙына ҡалаҡ менән һыу тамыҙҙылар. Ул тағы яланды ла ҡылҡынып йотто.* Һ. Дәүләтшина.

**ҠЫЛЛАУ** *ҡ.* Ҡылдан таҙартыу (дебетте). *Дебет ҡыллау.*

**ҠЫЛЛЫ** *с.* **1.** Ҡыл ярҙамында уйнамалы (музыка ҡоралдарына ҡарата). *Ҡыллы инструмент. Ҡыллы оркестр.* / Шундай инструмент менән башҡарылышлы. *Ҡыллы квартет.*

**2.** *диал.* Тоҡҡалы. *Ҡыллы ҡаҙан.*

**ҠЫЛМАНЛАУ** *ҡ. диал.* Йылманлау.

**ҠЫЛП** *оҡш.* Еңел генә ҡағылған, елпенгән хәрәкәтте белдергән һүҙ. *Балыҡ ҡылп итеп ҡалды.*

**ҠЫЛПАНЛАУ** *ҡ. диал.* Ҡыйпанлау. *Ҡылпанлап ҡына тора.*

**ҠЫЛП-ҠЫЛП** *оҡш.* Ҡабат-ҡабат ҡылп иткән хәрәкәтте белдергән һүҙ. *Ҡылп-ҡылп итеү.*

**ҠЫЛПЫУ** *ҡ.* Ҡылп итеү, ҡылп-ҡылп килеү. *Ҡылпып-ҡылпып оса аҡсарлаҡтар, ем эҙләйҙәр диңгеҙ ситендә* (Халыҡ йырынан).

**ҠЫЛСАҠ** *и. диал. ҡар.* **ҡылы** [1] 1.

**ҠЫЛС-ҠЫЛС** *оҡш.* Ат ауыҙлығын сәйнәгәндә һ. б. сыҡҡан тауышты белдергән һүҙ. *Ҡылс--ҡылс итеү. Ҡылс-ҡылс иттереү.*

**ҠЫЛСЫҠ** *и.* **1.** Йәнлек тиреһенең йомшаҡ йөнө араһындағы эре йөн; ҡыл. *[Кунаҡбикә әбей] ҡылсығы койолоп бөткән ҡама бүркен сисеп, өҫтәлдең бер ситенә ҡуйҙы.* Ҡ. Даян.

**2.** Иген башағының сәнскәкле мыйығы. *Оҙон ҡылсыҡ. Арпа ҡылсығы.*

**3.** Балыҡтың ваҡ һөйәге. *Сабаҡтың ҡылсығы күп була.*

**ҠЫЛСЫҠЛЫ** *с.* Ҡылсығы күп булған. *Ҡылсыҡлы бойҙай.*

**ҠЫЛСЫЛДАТЫУ** *к.* Ҡылс-ҡылс иттереү, ҡылс-ҡылс килтереү.

**ҠЫЛСЫЛДАУ** *к.* Ҡылс-ҡылс итеү. *Ҡылсылдама, тураt, ҡылсылдама, ҡыл дилбегәңде лә өҙөрһөң* (Халыҡ йырынан).

**ҠЫЛСЫН** *и. диал.* Ҡуҙәгә.

**ҠЫЛТ** *оҡш.* **1.** Эләгеп торған ҡаты нәмә ҡапыл ысҡынғанда һ. б. сыҡҡан тауышты белдергән һүҙ. *Ҡылт итеп ҡалыу.* ■ *Шул ваҡыт ҡылт итеп тышҡы ишектәр асылды* (Туй йырынан).

**2.** *р. мәғ. диал.* Шып. *Ҡылт туҡтау.*

♦ **Ҡылт итеү** 1) ҡапыл булыу. *Ҡылт итеп иҫкә төшөү.* ■ *Башыма ҡылт итеп бер уй килде.* Н. Мусин; 2) ҡапыл үсегеү, үпкәләү; ҡылтайыу. *Ҡылт итеп барыу. Бер һүҙ әйтер хәл юҡ, ҡылт итә лә китә.* **Ҡылт та итмәү** ыжлап та бирмәү, уйлап та бирмәү. *Мин әйтәм, ул ҡылт та итмәй, исмаһам.*

**ҠЫЛТАЙТЫУ** *к. йөкм. кар.* **ҡылтайыу.** *Кешене ҡылтайтыу.*

**ҠЫЛТАЙЫУ** *к.* Ҡапыл үсегеү, үпкәләү. *Ҡылтайып барыу. Ҡылтайып китеү.* ■ *Бына тағы, кешенең юҡ-бар һүҙенә ҡылтай ҙа яңғыҙ бер әбейҙе ташлап сыҡ та кит, имеш.* Н. Мусин.

**ҠЫЛТАЙЫШЫУ** *к. урт. кар.* **ҡылтайыу.**

**ҠЫЛТАНЛАУ** *к.* Ҡылтан-мылтан итеү. *Ҡылтанлаған булып йөрөү.*

**ҠЫЛТАН-МЫЛТАН** *с.* Тиҙ генә үсегеп барған булып, тырт-мырт итеүсән. *Ҡылтан-мылтан ҡыҙыҡай. // Ҡылтан-мылтан йөрөү.*

**ҠЫЛТИФУН** *и. һөйл.* Келтифун.

**ҠЫЛТ-ҠЫЛТ** *оҡш.* Ҡабат-ҡабат ҡылт иткән тауышты белдергән һүҙ. *Ҡылт-ҡылт итеү. Ҡылт-ҡылт килеү.*

**ҠЫЛТЛАТЫУ** *к.* Ҡылт иттереү. *Ҡылтлатып йоҙаҡты асыу.*

**ҠЫЛТЛАУ** *к.* Ҡылт итеү. *Бүлмәлә стена сәғәте ҡылтлап йөрөп тора.* С. Агиш.

**ҠЫЛТ-МЫЛТ, ҡылт та мылт** *оҡш.* **1.** Ҡабат-ҡабат ҡылт иткән тауышты белдергән һүҙ. *Ҡылт-мылт итеү.*

**2.** *с. мәғ. кусм.* Үсегеп, үпкәләп барыусан; кирле-мирле. *Ҡылт-мылт кеше. // Ҡылт-мылт һөйләшеү.*

**ҠЫЛТЫЙ** *с. диал.* Ҡылтым.

**ҠЫЛТЫЙ-БЫЛТЫЙ** *с. диал.* Ҡылтым. *Минең бисәкәй улай ҡыҙып китә торған ҡылтый-былтый кеше түгел.* С. Агиш.

**ҠЫЛТЫҠ** *с. диал.* Ҡылтым.

**ҠЫЛТЫЛДАТЫУ** *к.* Ҡылт-ҡылт иттереү. *Йоҙаҡты ҡылтылдатып асыу.*

**ҠЫЛТЫЛДАУ** *к.* Ҡылт-ҡылт итеү, ҡылт-ҡылт килеү.

**ҠЫЛТЫМ** *с.* Ҡапыл үсегеп, үпкәләп, ҡылтайып барыусан; ҡылтымбый. *Беҙ улай бик ялынмайбыҙ тәкәббер, ҡылтымдарға* (Халыҡ йырынан). // *Фәниләнең дә шулай өҙә генә һөйләшкән саҡтары булғылай. Бергән дә бит, Айнур, киноға барайыҡ, тигәс, ҡылтым ғына боролоп китеп барҙы.* Н. Мусин.

**ҠЫЛТЫМБЫЙ** *с. кар.* **ҡылтым.** *Әлдә Сабира сабыр әле, Рәкиә кеүек ҡылтымбый түгел.* И. Ғиззәтуллин.

**ҠЫЛТЫМБЫЙЛАНЫУ** *к. кар.* **ҡылтайыу.** *Бигерәк ягымлы ҡыҙ ул [Рауза]. Башҡа ҡыҙҙар ише ҡылтымбыйланып бармай.* Ф. Иҫәнғолов.

**ҠЫЛТЫМ-МЫЛТЫМ** *с.* Үсеккән булып, тырт-мырт итеүсән. *Ҡылтым-мылтым кеше. // Ҡылтым-мылтым һөйләшеү.*

**ҠЫЛТЫР** *оҡш.* Йоҡа ҡаты нәмә ҡатыға бәрелеп-бәрелеп киткәндә һ. б. сыҡҡан тауышты белдергән һүҙ. *Ҡылтыр итеү.*

**ҠЫЛТЫРАУ** *к. кар.* Ҡылтырлау. *Трамвай вагондарының ҡылтырауынан башҡа шылт иткән тауыш та юҡ.* И. Насыри.

**ҠЫЛТЫР-ҠЫЛТЫР** *оҡш.* Дауамлы рәүештә ҡылтыр иткән тауышты белдергән һүҙ. *Ҡылтыр-ҡылтыр итеү. Ҡылтыр-ҡылтыр килеү.*

**ҠЫЛТЫРЛАҠ** *с.* Ҡылтырлап торған. *Ҡылтырлаҡ арба.*

**ҠЫЛТЫРЛАТЫУ** *к.* Ҡылтыр-ҡылтыр иттереү, ҡылтыр-ҡылтыр килтереү.

**ҠЫЛТЫРЛАУ** *к.* Ҡылтыр-ҡылтыр итеү, ҡылтыр-ҡылтыр килеү. *Тәҙрә быялалары ел өргәнгә ҡылтырлап тора.*

**ҠЫЛШЫҠ** *и. диал. кар.* **ҡауаҡ** 1.

**ҠЫЛЪЯЙЫУ** *к. (ғәҙәттә юкл).* Нимәгәлер иғтибар итеп, иҫ китеү. *Уға әйттең ни, әйтмәнең ни — ҡылъяймай ҙа исмаһам.*

**ҠЫЛЪЯНЛАУ** *к.* Тегеләй-былай ҡуҙғалыу; ҡыймылдау. *[Аҡса батыр — Ҡороҫҡа:] Эй, истәк, хәҙер мин атам, керпегеңде лә ҡаҡмай төп-төҙ, ҡылъянламай тор, шунан батыр икәнеңде күрермен, ти* (Әкиәттән).

**ҠЫЛЫ** [1] *и.* **1.** Үле йылғанан йәки күлдән сығып, ҙур йылғаға ағып ятҡан бәләкәй генә йылға. *Ҙурыраҡ малайҙар .. йыйнаулашып ҡылыла ыштан менән балыҡ һөҙәләр.* Ғ. Амантай.

**2.** *диал.* Ҡылымыҡ. *Агиҙел тугайҙарға йәйелеп, әллә нисә ҡылынан, тал араларынан ҡотороп ағып ятты.* Ж. Кейекбаев.

**ҠЫЛЫ** [2] *и. диал. кар.* **ҡылыс** [4]. *Ҡаҙан ҡылыһы.*

**ҠЫЛЫ** [3] *и. диал.* Ҡын. *Бысаҡ ҡылыһы.*

**ҠЫЛЫЙ** *с.* Икеһе ике тарафҡа ҡарашлы (күҙге ҡарата). *[Егет:] Уның саман аяклы ҡылый күҙле ҡыҙын алып, ғүмеремдә әрәм итмәм.* Х. Ибраһимов. /Ике күҙе ике тарафҡа ҡарашлы (кешегә ҡарата). *Ҡылый кеше.* ■ *[Айһылыу:] Алаҡай ҡулаҡтың бер күҙе шәмбегә, икенсеһе йәшәмбегә ҡараған ҡылый малайына бармаһам, егет тапмайымдыр шул.* С. Мифтахов.

**ҠЫЛЫҠ** *и.* **1.** Ҡылған эш, ҡыланыш. *Йәмгиәткә зыянлы ҡылыҡ.* ■ *[Туктамышев — Ырыҫколга:] Беҙ һинең урмандағы ҡылыҡтарыңды ла онотманыҡ әле, көнө килер.* Б. Бикбай. *Ҡылған ҡылыҡтарға күпме тапҡыр тәүбә итергә ҡалды аҙаҡтан.* М. Кәрим.

**2.** Холоҡтағы, тәбиғәттәге бер һыҙат; ғәҙәт.

*[Яланбикә:] Әй, уның ғүмеренә ҡылығы шул инде, юҡҡа ояла ла ҡала.* Һ. Дәүләтшина.

**3.** Кешенең эше, ҡылығында сағылып, уның шәхесен билдәләй торған психик сифаттар; холоҡ. *Яҡшы ҡылыҡлы. Яман ҡылыҡлы.*

♦ **Ҡылыҡмы инде [шул]** берәүҙең бер эшен хупламағанда әйтелә.— *Ҡара инде, ҡылыҡмы инде, яңағымды ҡанға батырғанса һуҡтың бит.* Т. Хәйбуллин. **Ҡылыҡты ҡылыу** үткәргәнсә ниҙер эшләү, кәрәген биреү. [*Хәким:*] *Был бисә миңә әләкһә, ҡылыр инем ҡылыҡты.* Я. Хамматов. *«Туҡта, ҡылайыҡ әле ҡылыҡты»,— тип, былар Сәлмәндең утынын үртәп китергә була* (Әкиәттән).

● *Ҡыҙ ҡылығы менән, ир эше менән һөйҙөрөр.* Әйтем. *Ҡылығын белмәгән малға яҡын барма.* Әйтем. *Яҡшы аттың да бер алама ҡылығы була.* Әйтем.

**ҠЫЛЫҠ-ТОРОҠ** *и. йыйн.* Ҡылыҡ һәм ғәҙәт. *Ул [Мусаҡай ағай] малдың ҡылыҡ-торогон белеп үҫкән кеше түгел.* Б. Викбай.

**ҠЫЛЫҠ-ФИҒЕЛ** *и. йыйн. ҡар.* **ҡылыҡһыр.** *[Уйылданов] эскәмйәгә ултырып, мал-тыуарын, ағас-ташын, отчёт, дебет, кредиттарын күңеленән кисерә, үҙе буйһонған түрәләрҙең ҡылыҡ-фиғелен байҡай.* «Ағиҙел», 1982, № 9.

**ҠЫЛЫҠҺЫҘ** *с.* Ҡылығы, холҡо яман. *Ҡылыҡһыҙ бала. Ҡылыҡһыҙ мал.* ■ *[Ҡолансәс:] Мин әсәйемдән генә ҡурҡам. Бигерәк ҡылыҡһыҙ бит ул.* Д. Юлтый.

**ҠЫЛЫҠҺЫҘЛАНЫУ** *ҡ.* Насар ҡыланыу, тәртипкә һыймағанды эшләү; холоҡһоҙланыу. *Ҡыҙы тыуғас, Касъянов үҙе әҙерәк тынысланды, ҡатыны Татьяна, киреһенсә, ҡылыҡһыҙланды: көнө буйы илай, тоҡтомалға үсегә.* Я. Хамматов.

**ҠЫЛЫҠҺЫР** *и. йыйн.* Кешенең холҡона, тәбиғәтенә хас үҙенсәлеген күрһәткәндә әйтелә. *Кешенең ҡылыҡһырын белеү.* ■ *Гөлйөҙөм [Миңлекәй] тураһында .. бик күп насар ҡылыҡһыр ишеткән.* Һ. Дәүләтшина.

**ҠЫЛЫҠҺЫРАТЫЛЫУ** *ҡ. төш. ҡар.* **ҡылыҡһыратыу.**— *Һүҙҙәр ҡолаҡтан-ҡолаҡҡа, ауыҙҙан-ауыҙға күсеп ҙурайҙы. [Ваҡиғалар] иҫ киткес бер рәүештә ҡылыҡһыратыла башланы.* И. Насыри.

**ҠЫЛЫҠҺЫРАТЫУ** *ҡ. ҡар.* **ҡылыҡһырлау.** *Ҡылыҡһыратып һөйләү.*

**ҠЫЛЫҠҺЫРЛАНЫУ** *ҡ. төш. ҡар.* **ҡылыҡһырлау.**

**ҠЫЛЫҠҺЫРЛАУ** *ҡ.* Кемдең йәки нимәнеңдер булмышын, тәбиғәтен тасуирлау. *[Килдебайҙы], ике һыйыры, бер аты бар, башҡа нәмәһе юҡ, тип ҡылыҡһырланылар.* Ғ. Дәүләтшин.

**ҠЫЛЫМ** *и.* Эш, хәрәкәтте, хәлде белдергән, заман, зат, һан менән үҙгәреүсе грамматик һүҙ төркөмө.

**ҠЫЛЫМҺЫР** *с. диал.* Ҡылыҡһыҙ.

**ҠЫЛЫМЫҠ.** *и.* Йылғаның төп үҙәндән айырылған тармағы. **Кире ҡылымыҡ** кире яҡҡа ағып төшкән үле йылға.

**ҠЫЛЫНЫУ** *ҡ. төш. ҡар.* **ҡылыу** [1]. *Ҡылынған ҡылыҡ. Ҡылынған эш.*

**ҠЫЛЫС**[1] *и.* Бик оҙон һоноҡ бысаҡ рәүешендәге үткер һуғыш ҡоралы. *Булат ҡылыс. Ҡылыс ҡыны. Ҡылыс һабы.* ■ *Ҡылыс күтәрһәң, еңелеүҙе онот.* М. Хәй. *Ҡындан алып алмас ҡылысымды Урал ташҡайына ҡайраным* (Халыҡ йырынан].

♦ **Ҡылыс танау** *ҡар.* **танау.**

● *Ҡылыс яраһы төҙәлер, тел яраһы төҙәлмәҫ.* Әйтем.

**ҠЫЛЫС** [2] *и. тук.* Буйлыҡҡа үткәрелгән арҡауҙы тартып тығыҙлай торған тешле-тешле ҡорал. *Бишле ҡылыс. Етеле ҡылыс. Тығыҙлы ҡылыс. Ун икеле ҡылыс.* **Төгәй ҡылыс** һәр теш араһына икешәр еп һалынғанда әйтелә. **Ялан ҡылыс** һәр теш араһына берәр еп һалынғанда әйтелә. /Шул уҡ маҡсатта ҡулланылған ялпаҡ таяҡ рәүешендәге ҡорал, ҡалаҡ (ғәҙәттә ҡап, балаҫ һуҡҡанда ҡулланыла).

**ҠЫЛЫС** [3] *и.* Һауыт-һабаның ике яҡ ситенән эләктерелгән ярым дуға рәүешендәге тотҡа. *[Фатима], һыу килтергәс, күнәк ҡылысын, тауышы сыҡмаһын тип, әкрен генә ысҡындыра.* Ж. Кейекбаев.

**ҠЫЛЫС** [4] *и.,* **ҡаҙан ҡылысы** Ҡаҙандың ситe. *Ҡаҙан ҡылысына бысаҡ яныу.* ■ *Ҡаҙандың ҡылысынан итеп алҡындыра һалынған ит эргәһендә йәш бисә Зәлифә һалма һала.* Т. Хәйбуллин.

**ҠЫЛЫСБАЛЫҠ** *и.* Алабуғалар ғаиләһенә ҡараған, морононда оҙон һөңгөһө булған эре диңгеҙ балығы.

**ҠЫЛЫСТАРАН** *и. диал.* Сәгер балыҡ (*ҡар.* **балыҡ**).

**ҠЫЛЫУ** [1] *ҡ.* **1.** Ниҙелер ғәмәлгә атҡарыу; эшлеү. *Башбаштаҡлыҡ ҡылыу. Боҙоҡлоҡ ҡылыу. Егетлек ҡылыу. Уҫаллыҡ ҡалыу. Хыянат ҡылыу.* ■ *Камил уның [Зинуәнең] һылыулығына хайран ҡалып, ни генә әйтһәң дә килешмәҫ, ни генә ҡылһам да оҡшамаҫ, тип ҡурҡып тик ултыра ине.* Ә. Вәли. *Ир-егеттең ҡылғаны илдән башҡа була алмаҫ* (Ҡобайырҙан).

**2.** Ярҙамлыҡ ҡылым сифатында исемгә ҡушылып, шуның мәғәнәһенә ярашлы ҡылым яһай. *Баян ҡылыу. Бина ҡылыу. Бәхәс ҡалыу. Вәғәҙә ҡылыу. Ғибәҙәт ҡылыу. Ғәфү ҡылыу. Доға ҡылыу. Дәфен ҡылыу. Зыярат ҡылыу. Йәлеп ҡылыу. Ҡабул ҡылыу. Сарыф ҡылыу. Сәйәхәт ҡылыу. Талап ҡылыу. Тамаша ҡылыу. Тәрбиә ҡылыу. Тәүбә ҡылыу. Фатиха ҡылыу. Фиҙа ҡылыу.* ■ *Әҙәм балалары тоғролоҡто дәғүә ҡыла.* М. Ғафури. *Һеҙҙән бүтән был ерҙә рәхим ҡылыр кешем юҡ* (Бәйеттән).

□ **Хәл ҡылыу** ниндәйҙер эште, мәсьәләне ғәмәлгә атҡарыу. *Бәләкәй ҡалаларҙың үҫешен хәл ҡылғанда, уларҙы ике төркөмгә бүлеп эш итеү кәрәк.* М. Хисмәтов. **Эш ҡылыу** эш башҡарыу, эшләү. *[Айбулат — Юлияға:] Иптәштәр менән көрәшеп, .. уларҙың күрһәтмәһе буйынса эш ҡылырға тейешһең.* Һ. Дәүләтшина.

● *Яҡшылыҡ ҡылған аш ейгән, яманлыҡ ҡылған таш ейгән.* Әйтем.

**ҠЫЛЫУ** [2] *ҡ. диал. ҡар.* **ҡыҫыу.**[1] 2. *Ҡунысы балтырымды ҡылып тормағас, итеген алғым килмәне.*

**ҠЫЛЫУ** [3] *и. диал. ҡар.* **ҡылау** [3].

**ҠЫЛЫУ** [4] *с. диал.* Тар. *Ҡылыу кейем.* //*Билгенәйем минең шул талдыра — ҡайыш бауҙы ҡылыу бәйләһәм* (Халыҡ йырынан).

**ҠЫЛЫШ** *и. диал. кар.* **кауаҡ** 1.

**ҠЫЛЫШЛАУ** *к. диал.* Ҡауаҡлау. *Башы ҡылышлаған.*

**ҠЫЛЫШЫУ** *к. урт. кар.* **ҡылыу**[1]. *Шарт ҡылышыу.*

**ҠЫМҒЫЛДАУ** *к. диал.* Ҡыймылдау. *Өҫтәл ҡымғылдап ултыра.*

**ҠЫМҒЫРЛАУ** *к. диал.* Ҡыймылдау. *Бабай ҡымғырламай, шаҡ ҡатып тик ултыра.* М. Әбсәләмов.

**ҠЫМЙЫРАУ** *к. кар.* **ҡымйыу.**

**ҠЫМЙЫТЫУ** *к.* Күмәген бер ерҙә ҡайнаштырыу. *Бала-сағаны ҡымйытыу.*

**ҠЫМЙЫУ** *к.* Күмәк булып бер урында ҡайнашыу; мыжғыу. *Ҡымйып торған халыҡтың тауышы әҙерәк баҫыла төштө.* Я. Хамматов.

**ҠЫМЙЫШЫУ** *к. урт. кар.* **ҡымйыу.** *Аяҡ аҫтында ем һорап, кош-ҡорт ҡымйыша.* Ш. Янбаев.

**ҠЫМПАЙЫУ** *к. диал.* Тумпайыу.

**ҠЫМРАН** *и.* Һыйыр һөтө ҡушылған ҡымыҙ. *Ҡымран эсеү.*

**ҠЫМСЫУ** *к. диал.* Ҡыпсыу. *Балтырҙы ҡымсып торған балаҡ.*

**ҠЫМТЫҠ** *с.* Ҡымтып ябыулы. *Ауыҙы ҡымтыҡ.*

**ҠЫМТЫЛЫУ** *к. төш. кар.* **ҡымтыу.** *Ҡымтылған ирен.*

● *Киленемә барҙым — киреләдем дә һүҙылдым, ҡыҙыма барҙым — ҡыҫылдым да ҡымтылдым.* Әйтем.

**ҠЫМТЫНЫУ** *к. ҡайт. кар.* **ҡымтыу.** *Юрған менән ҡымтынып ятыу.*

**ҠЫМТЫУ** *к.* **1.** Ҡыҫып йомоу, ҡыҫа тотоу. *Иренде ҡымтыу. Билдән ҡымтып алыу.* ■ *Өләсәйем тешһеҙ ауыҙын ҡымтып тик ултырҙы, бер һүҙ ҙә әйтмәне.* З. Биишева. *Әхмәҙулла бабай аҡ һаҡалын услап, иренен ҡымтыған да уйға батҡан.* Ә. Вахитов.

**2.** Ыҫҡынмаҫлыҡ, асылып китмәҫлек итеп тартып бәйләү, йыйып, ыҡсымлап ҡыҫтырыу (мәҫ. салғыйҙы, итәкте һ. б.). *Көпөнө ҡымтып элеү. Итәкте ҡымтып ултырыу. Ҡымтып ябыу. Ҡымтып тегеү.* ■ *Ғариф ағай билен яҫы ҡайыш менән ҡымтып быуған.* Б. Бикбай. *Ҡарауаттарҙың өҫтө бер төҫлө һоро одеялдар менән ябылған да аҡ йәймәләр менән ҡымтып ҡуйылған.* Ғ. Дәүләтшин.

**ҠЫМҺАЙЫУ** *к. диал.* Тумһайыу. *Ике килен шымбайып, тик тора, ти, ҡымһайып.* З. Биишева.

**ҠЫМШАНЫУ** *к.* **1.** Саҡ ҡына ҡуҙғалыу, ҡыймылдау. [*Мазһар — Хисмәткә:*] *Һиненсә, балаларың да ас булһын, үҙең дә ҡымшанма.* Х. Ибраһимов.

**2.** *күсм.* Нимәгәлер иғтибар биреп, ғәм итеү.— *Хәмзә ҡымшанмай ҙа йөрөй ҙәһә, сара күреү шулай буламы ни?* Я. Вәлиев.

**ҠЫМШАТЫУ** *к.* Саҡ ҡына ҡуҙғатыу, ҡыймылдатыу. [*Ат*] *бөтә кәүҙәһен ҡыймылдатып, күкрәк мускулдарын ҡымшатып ҡуйҙы.* А. Таһиров.

**ҠЫМШАУ** *к. диал.* Ҡыймылдау.

**ҠЫМШЫРЫУ** *к. диал.* Ҡымтыныу.

**ҠЫМЫҘ** *и.* Бейә һөтөнән әсетеп яһаған эсемлек. *Сөсө ҡымыҙ. Әсе ҡымыҙ. Ҡымыҙ ҡуры. Ҡымыҙ яһау. Ҡымыҙ бешеү. Ҡымыҙ менән дауалау.* ■ *Ҡымыҙҙың әҙерләнә башлауы мең йылдар менән һанала.* М. Ғөбәйҙуллин. /Кәзә, һыйыр, дөйә һөтөнән әсетелгән эсемлек. *Кәзәләр бәрәсләп, көн дә ҡымыҙ эсерә торғас, Мөхтәр ағай матурланып китте.* Ф. Иҫәнғолов.

**ҠЫМЫҘЛЫҠ**[1] *и.* Ҡымыҙ яһай торған урын.

**ҠЫМЫҘЛЫҠ**[2] *и.* Ваҡ ҡына өлпө сәскәле, тал япраҡлы, быуынтыҡ-быуынтыҡ һабаҡлы әскелтем үлән. *Һөрөлгән йомшаҡ ер өҫтөндә быуынлы-быуынлы булып, йыуан ҡымыҙлыҡтар үҫә.* З. Ғәлимов.

**ҠЫМЫҘСЫ** *и.* **1.** Ҡымыҙ яһаусы. *Ҡымыҙсы Мөхәмәтша Рәхмәтуллин менән Лев Николаевич Толстой араһындағы һоҡланғыс дуҫлыҡ егерме йылдар буйына дауам иткән.* К. Мәргән.

**2.** Ҡымыҙ эсергә килеп ятҡан кеше. *Матур саҡтарҙа ауылға төрлө ҡалаларҙан ҡымыҙсылар килә.* Д. Юлтый.

**ҠЫМЫҘСЫЛЫҠ** *и.* Хужалыҡтың ҡымыҙ яһау тармағы.

**ҠЫМЫҘХАНА** *и.* Ҡымыҙ яһап, ҡымыҙ һата торған бина.

**ҠЫМЫЙ** *с. диал. кар.* **ҡыр.**[2] 2.

**ҠЫМЫЙЫУ** *к. диал.* Мылыйыу. *Әхмәт үҙе лә һөйләй, башҡаларҙың һөйләгәнен ҡымыйып ҡына тыңлап тора.* Ш. Насыров.

**ҠЫМЫРЙЫТЫУ** *к.* Ҡымырйыу тыуҙырыу, ҡымырйыу хәленә килтереү. *Ҡымырйытып ҡыҫытыу. Тамаҡты ҡымырйытыу.* ■ [*Нәбирәнең*] *күңелен ниндәйҙер йылы ағым рәхәт иттереп ҡымырйытып үтте.* Н. Мусин.

**ҠЫМЫРЙЫУ** *к.* **1.** Төрлө ерҙә нимәлер йыбырлаған, йөрөгән һымаҡ булыу. *Тамаҡ төбө ҡымырйый. Күҙ ҡымырйып ҡысый.* ■ *Һарундың арҡа буйы ҡымырйып китте.* М. Кәримов.

**2.** *күсм.* Эстән тынғыһыҙланыу, ҡытыҡланыу. *Йөрәк ҡымырйый.* ■ *Йоратбаевтың күңеленең ҡайһылыр бер ере ҡымырйып ҡуйҙы.* Х. Назаров.

**3.** *диал.* Ҡымйыу.

**ҠЫМЫРТҠА** *и. диал.* Ҡырмыҫҡа.

**ҠЫН** *и.* Билгә тағып йөрөмәле ҡоралдың һауыты. *Балта ҡыны. Бысаҡ ҡыны. Ҡылыс ҡыны. Хәнйәр ҡыны. Ҡынға һалыу,* ■ *Абдулла ахун пистолетын ҡындан ала, атам, тип* (Халыҡ йырынан). /Ҡурай һауыты. *Талип алып ҡындан ҡурайын, ишеттерә уйнап уларға.* Б. Вәлит.

**ҠЫНА**[1] [*гәр.*] *и.* **1.** Дымғыл, һаҙмат урындарҙа үҫкән алабута япраҡлы тәпәшәк үлән.

**2.** (*йәки* **ҡына гөлө**) Сит-сите саҡ ҡына ҡирткәсләнеп торған оҙонсараҡ япраҡлы, быуынтыҡ-быуынтыҡ итләс ҡыҙыл һабаҡлы ҡыҙыл сәскәле бүлмә гөлө. *Йәшен яҡтыһында, серле буяуҙарға мансылып, көршәккә ултыртылған ҡына гөлө шәүләһе күренеп ҡалды.* З. Хисмәтуллин. *Ҡышлау ҡынам бер ни белмәй сәскәләнә көн һайын.* Ә. Вахитова.

**3.** Үҫемлектән алынған сәс, тырнаҡ буяуы. *Сәсте ҡынаға буяу.*

● *Туй үткәс, ҡына яҡмайҙар.* Мәҡәл.

**ҠЫНА**[2] *и.* Бал менән тулы кәрәҙҙең өҫтөн һылап ҡуйған йоҡа ғына балауыҙ. *Ҡыналы бал.*

**ҠЫНА**[3] (**кенә, ғына, генә**) *киҫ.* **1.** Һәр төрлө һүҙҙең мәғәнәһен айырым алып сикләй. *Алға ғы-*

*на ҡарау. Ауырығанға ғына ятыу. Байрамда ғына кейеү. Баҡсала ғына йөрөү. Ебәктән генә кейенеү. Оҙатырға ғына килеү. Орошҡас ҡына тыйылыу. Тыштан ғына риза булыу. Үҙ-ара ғына һөйләшеү. Шуны ғына көтөү.* ■ *Кеҫәлә көнбағыш ҡына ҡалды.* Т. Йәнәби. *Мин һөйөрмөн, иркәм, һине, күңелең саф булһа ғына.* М. Хәй. /Һүҙҙең мәғәнәһен сикләп, әҙһетеү, кәмһетеү төҫмөрө бирә. *Алты ғына һум. Бармаҡ башындай ғына май. Бер айлыҡ ҡына аҙыҡ. Бер ҡатлы ғына йорт. Бер минут ҡына ваҡыт. Булған ғына донъя. Ун йәшлек кенә бала. Уҫҡа ғына һыйырлыҡ. Ике генә саҡырым. Сытыр ғына утын.* ■ *Ул һөйләшә лә белмәй. Ҡурсаҡ ҡына бит ул.* Ғ. Ғүмәр.

**2.** Һөйләм, хәбәр эсендә айырым һүҙгә баҫым яһау өсөн ҡулланыла. *Башты ғына ҡаңғыртыу. Кешенән генә күреү. Таңға табан ғына йоҡлап китеү. Һаулыҡты ғына белгертеү. Һөтө гел ҡаймаҡ ҡына. Яҡшыға ғына уҡыу.* ■ *Ул теләк сағ араһындағы хыял ғына.* Д. Юлтый. /Һүҙҙең мәғәнәһенә баҫым яһай. *Арыу ғына кеше. Бала ғына көйө. Бәләкәй генә һауыт. Ваҡ ҡына ком. Ҙур ғына булмә. Ҡыҙыҡ ҡына китап. Матур ғына ҡыҙ. Юҡ ҡына йомош. Ягымлы ғына ҡараш. Яҡын ғына туған.* ■ *Фәхри байтаҡ ҡына уйланып ултырҙы.* Б. Бикбай. *Йомшаҡ ҡына һөйөп, биттән һыйпап, аҡрын ғына иҫә яҙғы ел.* Х. Ҡунаҡбай.

**3.** Ҡайһы бер рәүеш һәм сифатты айырым бер шартта ҡылымға теркәй. *Аҙ ғына көтөү. Аҡрын ғына һөйләшеп ултырыу. Ашығыс ҡына ниҙер яҙыу. Былай ғына ҡарап тороу. Шым ғына тыңлап ятыу. Яй ғына атлап барыу.* ■ *[Кешеләр] аҡрын ғына, талғын һәм тыныс ҡына хәл йыйып баралар.* С. Агиш.

**4.** Эмоциональ һөйләмдәге алмаш, рәүеш һүҙҙәренең мәғәнәһен көсәйтә. *Кем генә йөрөмәй бында. Ҡайҙан ғына унда барҙым. Ҡалай ғына булмаһын. Ҡасан ғына китә инде.* ■ *Ҡайҙа ғына барма, яҡын хисле мең-мең иптәш бар.* Ғ. Сәләм.

**5.** Эш-хәрәкәттең процесын көсәйтә. *Ала ғына башлау. Барып ҡына ҡара. Ҡайтһын ғына әле. Туҙҙырҙым ғына тегеләрҙе. Итте һыпырта ғына.* ■ *Шул яҙыуҙы ҡырып торғанда ғына беҙҙең следователь барып ингән.* С. Агиш.

**6.** Зат, килеш ялғауҙары менән килгәндә иркәләү йәки кесрәйтеү, йылылыҡ мәғәнәһен бирә. *Һәтес, һәтес, һәтес кенәһе лә кемдең бәнес кенәһе?* Ғ. Амантай. *Бит кенәһе сейәләй, танау ғынаһы төймәләй.* Р. Ниғмәти. *Ат ҡынайым бара юл менән* (Халыҡ йырынан).

**7.** Халыҡ йырҙарында ижек һанын тултырыу һәм эмоциональ төҫмөр биреү хеҙмәтен үтәй. *Анауҙа ғына яткан күк түбәнең артыу-артыуҙары күпме икән?* (Халыҡ йырынан). *Һайрай ғына турғай ай бейектә, бөҙрә генә башлы еректә* (Халыҡ йырынан).

**ҠЫНАЛАНЫУ** *к. төш. кар.* **ҡыналау.** *Ҡыналанған кәрәҙ.*

**ҠЫНАЛАУ** *к.* Кәрәҙ өҫтөн ҡына менән һылау.

**ҠЫНДАРАҠ** *и. диал. кар.* **ҡондораҡ** 1.

**ҠЫНЙЫРАҠ** *и.* Табаны йылҡының сираҡ тиреһенән, башы күндән, ҡуныcы бәкәлгә тиклем итеп, киндерҙән бышымлап тегелгән элекке аяҡ кейеме. *Бышымы бәкәлгә бау менән һығып бәйләнә. Тиренең ығышы артҡа ҡаратып тегелгән булғас, ҡынйыраҡ аяҡты артҡа шыуҙырмай.* Т. Баишев.

**ҠЫНЛЫҠ** *и. диал.* Сурағай.

**ҠЫНЫУ** [1] *к. иҫк.* Алдан хәстәрлек күреп әҙерләнеү. *Ир Бабсаҡ Йәмиләне алып ҡайтҡан, уйын-көлкө, тамашаға ҡынып ҡайтҡан.* «Бабсаҡ менән Күсәк».

● *Ҡаты ҡышҡа ҡыныу кәрәк, буръяҡ һыуға тоноу кәрәк.* Мәҡәл.

**ҠЫНЫУ** [2] *с. иҫк.* Киләсәккә әҙерлек, хәстәрлек күреүсән; йүнсел, хәстәрлекле, булдыҡлы. *Ҡыныу кеше.*

**ҠЫНЫУЛАНЫУ** *к. иҫк.* Киләһе көнгә, алдағы эшкә әҙерлек, хәстәрлек күреү; әҙерлекләнеү. *Йәй эшләгән халыҡ һаҡлыҡ аҙыҡ менән күмелде. .. Һөйләшә бар халыҡ күкрәк киреп, ҡыныуланғас һин дә, мин дә бер.* Х. Ғәбитов.

**ҠЫҢҒЫР** [1] *с. диал.* Ҡырын. *Ҙур ҡапҡасы ҡыңғыр ята, сәйнүк уны дыңғырлата.* Р. Басимов.

● *Ҡырыҫланған эт ҡыңғыр йүгерер.* Мәҡәл.

**ҠЫҢҒЫР** [2] *окш.* Ҡыуышланып торған ҡалын тимергә һуғып алғанда һ. б. сыҡҡан тауышты белдергән һүҙ; дыңғыр. *Ҡыңғырау ҡыңғыр итә.*

**ҠЫҢҒЫРАТЫУ** *к.* Ҡыңғыр-ҡыңғыр иттереү; дыңғырлатыу. *Ҡарға түйына ике-өс көн ҡалғас, ауылдың өс-дүрт әбейе .. ҡыңғырау ҡыңғыратып ауыл буйлап йөрөй.* «Совет Башҡортостаны», 1969, 28 август.

**ҠЫҢҒЫРАУ** [1] *к.* Ҡыңғыр-ҡыңғыр итеү; дыңғырлау. *Ҡыңғырауҙар, көмөш ҡыңғырауҙар ҡыңғырайҙар айлы тынлыҡта.* Р. Ғарипов.

**ҠЫҢҒЫРАУ** [2] *и.* Шалтыратыу өсөн тел ҡуйып эшләнгән эсе ҡыуыш нәмә. *Еҙ ҡыңғырау. Ҡуш ҡыңғырау. Ҡыңғырау тауышы. Сиркәү ҡыңғырауы.* ■ *Атты туғарҙыҡ. Тышаулап, муйынына ҡыңғырау таҡтыҡ.* С. Кулибай.

◆ **Ҡыңғырау сәскә** *кар.* **сәскә.**

**ҠЫҢҒЫР-ҠЫҢҒЫР** *окш.* Ҡабат-ҡабат ҡыңғыр иткән тауышты белдергән һүҙ. *Ҡыңғыр-ҡыңғыр итеү. Ҡыңғыр-ҡыңғыр килеү.*

**ҠЫҢҒЫРЛЫҠ** *и. диал.* Ҡыйынлыҡ. *Ҡыңғырлыҡ килтереү.*

**ҠЫҢҒЫРТ** *с. диал.* Ҡырын. *Башты ҡыңғырт һалыу.*

**ҠЫҢҒЫРТЫУ** *к. диал.* Ҡырынайтыу. *Бүректе ҡыңғыртып кейеү.*

**ҠЫҢРЫЙ** *с. диал.* Ҡырын.

● *Ҡырҡ кеше бер яҡ, ҡыңрый кеше бер яҡ.* Әйтем.

**ҠЫП** [1] *окш.* Йоҡа ҡатҡыл нәмә ҡапыл ҡағылғанда һ. б. сыҡҡан тауышты белдергән һүҙ. *Ҡып итеү.* ■ *Ишек асылыуға тәҙрә ҡарындығы ҡып итеп ҡалды.* Ф. Иҫәнғолов.

◆ **Ҡып итеү** 1) йәһәт кенә әҙер булыу. *Бер ергә барырға тиһәң, ҡып итеп тора;* 2) ҡапыл ғына пәйҙә булыу. *Ҡып итеп ҡайтып инген.* К. Кинйәбулатова; 3) тап-таман булыу. *[Һатыусы:] Яҡшы костюм, өҫтөңә ҡып итеп кенә тора.* Б. Бикбай.

**ҠЫП** [2] *киҫ.* **ҡы-** ижеге менән башланған төп сифат һәм рәүешкә ҡушылып, артыҡлыҡ дәрәжәһе бирә. *Ҡып-ҡыҙыл. Ҡып-ҡыҫҡа итеү.*

**ҠЫПА** *р. диал.* Шыпа. *Араны ҡыпа өҙөү.*

**ҠЫПАН-ҠЫПАН** *окш.* Ҡыланып, ҡыйшанлап торған ҡиәфәттә белдергән һүҙ. *Ҡыпан-ҡыпан итеү. Ҡыпан-ҡыпан килеү.*

**ҠЫПАНЛАҠ** *с.* Ҡыпанларға яратыусан; ҡыйшанлаҡ.

**ҠЫПАНЛАУ** *ҡ.* Күҙҙе, башты уйнатып, ҡылансыҡланыу; ҡыйшанлау. *Әнисә һис аптырамай яуапҡа .. ҡыпанлама, бейей белһәң, бейе, ти.* К. Кинйәбулатова.

**ҠЫП-ҠЫП** *окш.* Ҡабат-ҡабат ҡып иткән тауышты белдергән һүҙ. *Ҡып-ҡып итеү. Ҡып-ҡып килеү.*

**ҠЫПСАҠ** *и.* **1.** Төрки халыҡтарының бер ҡәбиләһе.

**2.** Бер башҡорт ырыуының исеме һәм шул ырыуға ҡараған кеше. *Ҡарағай ҡыпсаҡ. Ҡара ҡыпсаҡ.* ■ *Бабсаҡ батырҙың аҙаматтары ҡыпсаҡ еренә ҡайтып, батман менән тупраҡ килтерергә мәжбүр булған.* «Бабсаҡ менән Күсәк». *Сит ырыуҙа үҫә бер ҡыпсаҡ бала.* «Бабсаҡ менән Күсәк».

**ҠЫПСЫУ** *ҡ.* Эләктереп ҡыҫыу, ҡыҫып тотоу. *Ҡыпсып алыу.*

**ҠЫПСЫУЫР** *и.* Ҡыҫып тота торған ҡорал. *Ап-аҡ булып ҡыҙған тимерҙе Миңнегәле ҡарт оҙон ҡыпсыуыры менән әйләндерә.* Х. Ғиләжев.

**ҠЫПТЫНЫУ** *ҡ. диал.* Ҡымшаныу. *Яҙдар батыр Айҡашты ҡутәрергә тип бер нисә тапҡыр ҡыптынып ҡараһа ла булдыра алманы* (Әкиәттән).

**ҠЫПТЫР** *окш.* **1.** Ҡатҡыл йоҡа нәмә таушалғанда сыҡҡан тауышты белдергән һүҙ. *Ҡыптыр итеү.*

**2.** *с. мәғ.* Ҡыптырлап тороусан; ҡаты. *Ҡыптыр тун.* ■ *Иләнмәгән ҡыптыр тире менән туңып барған тәнен ҡаплаған.* Ҡ. Аралбаев.

● *Ҡырҡ улың булғанса, ҡыптыр ирең булһын.* Әйтем.

**ҠЫПТЫР-ҠЫПТЫР** *окш.* Ҡабат-ҡабат ҡыптыр иткән тауышты белдергән һүҙ. *Ҡыптыр-ҡыптыр итеү. Ҡыптыр-ҡыптыр килеү.*

**ҠЫПТЫРЛАҠ** *с.* Ҡыптырлап тора торған. *Ҡыптырлаҡ ҡағыҙ.*

**ҠЫПТЫРЛАТЫУ** *ҡ.* Ҡыптыр-ҡыптыр иттереү, ҡыптыр-ҡыптыр килтереү.

**ҠЫПТЫРЛАУ** *ҡ.* **1.** Ҡыптыр-ҡыптыр итеү, ҡыптыр-ҡыптыр килеү. *Өҫкә кейгән бишмәтең ҡытаттай ғына ҡыптырлай* (Сеңләүҙән).

**2.** *ҡусм.* Әкренләп кенә хәрәкәт итеү, ҡыбырлау. *Беҙ ҡыптырлап йөрөгән булабыҙ әле.* Ш. Янбаев.

● *Тояҡ тыптырлар, тун ҡыптырлар.* Әйтем.

**ҠЫПТЫРЛАШЫУ** *ҡ. урт. ҡар.* **ҡыптырлау.** *Йәш япраҡтар ҡыптырлашып бәүелеп китә.* К. Кинйәбулатова.

**ҠЫПШАНЛАУ** *ҡ. диал.* Ҡыйшанлау.

**ҠЫПШЫҠ** *с. диал. ҡар.* **ҡыйшанлаҡ** 2.

**ҠЫПШЫНЫУ** *ҡ. диал.* Ҡымшаныу.

**ҠЫПШЫРЛАУ** *ҡ. диал.* Ҡыштырлау.

**ҠЫПШЫУ** *ҡ. диал.* Ҡымтыу.

**ҠЫПЫЙ** *с. диал.* Ҡупым.

**ҠЫПЫҠ** *с. диал.* **1.** Ҡыйпысыҡ.

**2.** Маҡтансыҡ, ҡупым. *Әллә бәлки ҡыпыҡ был ҡыҙыйҙың былай һөйләнеүе бушҡалыр.* К. Кинйәбулатова.

**ҠЫПЫЛДАТЫУ** *ҡ.* Ҡып-ҡып иттереү, ҡып-ҡып килтереү. *[Егет:] Ҡалаға етәме һуң?! .. Сәғәт һигеҙҙә ҡыпылдата баҫып, эшкә китәһең, сәғәт алтыла семетә баҫып ҡайтаһың.* А. Ғирфанов.

**ҠЫПЫЛДАУ** *ҡ.* **1.** Ҡып-ҡып итеү, ҡып-ҡып килеү. *Ҡыпылдап тороу.*

**2.** *ҡусм.* Борсолоп, һиҫкәнеп, сыҙамһыҙланыу. *Өйҙә кеше юҡ. Ут-маҙар сығып китмәһен тип, ҡыпылдап ҡына ултырам.* Һ. Дәүләтшина.

**ҠЫПЫР** *и. диал.* Ваҡ-төйәк. *Донъя ҡыпыры.*

**ҠЫПЫРТ** *и. диал.* Ҡапрыҡ.

**ҠЫПЫС** *с. ҡар.* **кепес.** *Ҡыпыс күҙ.*

**ҠЫПЫСЛАУ** *ҡ. ҡар.* **кепесләү.**

**ҠЫПЫШ** *р.* Бәләкәй генә, әҙ генә. *Ҡыпыш ҡыбырлатыр әмәл юҡ — килә лә етә.*

◆ **Ҡыпыштан ҡоро ҡалмау** бер нәмәнән дә буш ҡалмай, һәр ергә ҡыҫылыу. *Килгән әбейҙәр араһында ауылдағы ҡыпыштан ҡоро ҡалмай торған Кизәр әбей ҙә бар ине.* Ғ. Дәүләтшин.

**ҠЫР** [1] *и.* **1.** Ике яҡтың буйҙан-буй мөйөшләнеп килгән киҫелеше. *Таҡта ҡыры.*

**2.** Башы тар ғына булып һуҙылған оҙон тау; һырт. *Ҡыр артылыу.* ■ *Урҙан ҡырға һикереп, оса сапҡан дөлдөлдәй.* Ш. Бабич.

◆ **Ҡыр арҡа** *ҡар.* **арҡа** 2.

**ҠЫР** [2] *и.* **1.**Ниҙең дә булһа сите, ситке өлөшө. *Күл ҡыры. Өй ҡыры. Урман ҡыры.*

**2.** Сит яҡ, сит тараф. *Ҡырға ҡарау. Юлдан ҡырға сығыу. //Ҡыр яҡ.*

**3.** Билдәле бер нәмәнән ситтәге урын. *Ҡырға алыу. Ҡырға ҡуйыу. Ҡырға ташлау. Ҡырҙан ҡарау. Ҡырҙан уратыу. Ҡырҙа тороу.* ■ *Юлдан ҡырҙа, ике-өс саҡрым алыҫлыҡта ... ауыл күренә.* Д. Юлтый. /Сит, ят яҡ, алыҫ ер. *Ҡырға китеү. Ҡырҙан ҡайтыу.*

**4.** Өйҙән, ауылдан ситтәге тирә-яҡ ер. *Сәғиҙә балаларҙы ҡырға алып сыҡты. Ауылдан бер-ике километр ер киткәс, улар бер тауҙың таҡыр түбәһенә менделәр.* М. Тажи.

**5.** Кеше тарафынан эйәләштерелмәгән, иректә йәшәгән йәнлектәргә, ҡош-ҡортҡа ҡарата әйтелә. *Ҡыр йәнлеге. Ҡыр ҡаҙы. Ҡыр өйрәге.*

**6.** Кеше тарафынан сәсеп үҫтерелмәгән, культуралаштырылмаған үҫемлектәргә ҡарата әйтелә. *Ҡыр алмаһы. Ҡыр йыуаһы. Ҡыр сейәһе.*

**7.** Тигеҙ ялан. *Асыҡ ҡыр.* ■ *Төшөмдә һеҙҙе гел күрәм, минең тыуған ҡырҙарым, балдай татлы һыуҙарым.* Салауат Юлаев. /Иген сәскән ер; баҫыу. *Бойҙай ҡыры. Колхоз ҡыры. Ҡыр эше.* ■ *Мең-мең тракторҙар һөрөп йөрөй һинең ҡырыңды.* Ғ. Сәләм.

◆ **Күҙ ҡыры менән ҡарау** *шул уҡ* **күҙ ҡойроғо менән ҡарау** (*ҡар.* **күҙ**). **Ҡыланышы ҡырға һыймай** бик тәртипһеҙ, шашҡан кешегә әйтелә. **Ҡыр талашыу** *ҡар.* **талашыу. Ҡыр тибеү** *шул уҡ* **ситкә ҡағыу** (*ҡар.* **сит** [1]). **Яу ҡыры** һуғыш, яу барған ер.

● *Илдә йөрөгән ил таныр, ҡырҙа йөрөгән ер таныр.* Әйтем. *Күлдә йөҙгән аҡ өйрәк ҡыр ҡәҙерен белмәҫ.* Әйтем. *Ҡулда ҡулдан ейгән ат ҡырҙа һинән тоттормаҫ.* Мәҡәл.

**ҠЫР** [3]: **кыр килеү** *диал.* зыҡ ҡубыу (*кар.* **зыҡ**). *Фатиманы һыуға баткан тип, кыр килгәндәр ауылы менән.* Ж. Кейекбаев.

**ҠЫРА** [1] *и.* **1.** Тау һыртының өҫкө ҡыры; ҡырлас. *Кыра буйлап барыу. Тау кыраһы.*

**2.** Буйҙан-буй теҙеп өйәлгән бесән йәки һалам күтәремдәре. *Кыраға тартыу.*

**ҠЫРА** [2] *р. диал.* Шыпа, бөтөнләй. *Кыра эшкә ярамай.*

**ҠЫРАҒАЙ** *с.* **1.** Кеше аҫрап, кеше үҫтермәгән; ҡулға эйәләшмәгән. *Кырагай үҫемлек. Кырагай хайуан.* ■ *Кырагай бал корто талымһыҙ, сыҙамлы була, балды күп йыя.* М. Хисмәтов.

**2.** Тәүтормош кимәлендәге. *Кырагай халык.*

**3.** Юғары культура үлсәменә һыймаған; түбән. *Кырагай йола.*

**4.** Кешегә ылыҡмаған; ҡырыҫ. *Кырагай булып үҫкән бала.*

**ҠЫРАҒАЙЛАНЫУ** *к.* **1.** Ҡырағайға әйләнеү. *Кырагайланган бесәй. Кырагайланган киндер. Кырагайланган ат.* ■ *Варандар кырагайланган аттарга ла һөжүм итә.* Д. Бураҡаев.

**2.** Кешегә ылыҡмаҫ, кешенән тартыныусан булыу; ҡырыҫланыу.

**ҠЫРАҒАЙЛЫҠ** *и.* **1.** Кешегә ылыҡмай, кешенән тартыныусан булыу сифаты. *Баланы кырагайлыкка дусар итмәй үҫтереү.*

**2.** Тәүтормош кимәлендәге үҫеш осороноң иҫкергән исеме.

**ҠЫРАҒАС** *и.* Ҡорт ҡунып, бал йыйған ҡыуышлы ағас. *Кырагасты тапкан кеше үҙенең тамгаһын куя.*

**ҠЫРАЗ** *и.* Ниҙендер ҡырланып ятҡан текә ере, өҫкө ҡыры. *Койма буйына һалган көрт кыраздары.* ■ *Кыраздарга теҙелеп үҫкән карагайҙарҙың әскелтем еҫе танауга килеп бәрелһә, кукрәктәр киңәйеп китә.* Н. Мусин. *Тау битенә, кыразга менеп киткән акланда лыпашып бөткән кап-кара кәбән ултыра.* Ж. Кейекбаев.

**ҠЫРАЗЛАНЫУ** *к.* Ҡыраз хәленә килеү. *Кар кыразланып ята.*

**ҠЫРАЗЛАУ** *к.* **1.** Ҡыраз буйлау. *Кар тәрән йылы коралайҙар кыразлап йөрөй.* М. Тажи.

**2.** Ҡыраз хәленә килтереү. *Буран карҙы кыразлап һалган.*

**ҠЫРАҠА** *и. диал.* Ҡыр арҡа (*кар.* **кыр** [1]). *Сура батыр яу килгәнен ишеткәс, ике кыҙын Урал кыракаһының таш тишегенә алып барып йәшергән* (Әкиәттән).

**ҠЫРАҠЫ** *с.* Үҙ һүҙендә, үҙ фекерендә тороусан; ныҡ фекерле, бер һүҙле. *Кыраки кеше.*

**ҠЫРАҠЫҺЫҘ** *с.* Үҙ һүҙендә, үҙ фекерендә тора белмәгән, йомшаҡ.

**ҠЫРАЛАТЫУ** *к. йөкм. кар.* **кыралау.**

**ҠЫРАЛАУ** *к.* Ҡыраға тартыу, ҡыраға һалыу. *Бесәнде кыралау.*

**ҠЫРАЛАШЫУ** *к. урт. ярҙамл. кар.* **кыралау.**

**ҠЫРАН** *и. иҫк.* Ҡыйралыш, ҡырғын. *[Карт:] Илгә бер ир тыуыр тип, дейеүҙәр менән йыланга бер көн кыран һалыр тип, .. шуны көтөп яттым мин.* «Урал батыр».

♦ **Ҡыран булыу** дыу-әкәмәт булыу, зыҡ ҡубыу. *Йырлап кыран була торгайнык.* **Ҡыран ҡалһын** ҡарғағанда әйтелә. *Кыран калһын ырыуың.*

**ҠЫРАНҒЫЛАУ** *к. иҫк.* Ҡыйралыу, емерелеү. *Донъя кырангылап ята.*

**ҠЫРАН-ҒӘЛӘМӘТ** *и. йыйн.* Ҙур ығы-зығы; бола, шау-шыу. *Кыран-гәләмәт куптарыу.* ■ *Әле бер нисә көн элек кенә кеше сират теҙелеп, кыран-гәләмәт килә ине, ә хәҙер магазинга ин дә, йәнеңә кәрәген ал да сыҡ.* М. Тажи.

**ҠЫРАН-ҠЫЙҠЫУ** *и. йыйн.* Шау-шыу килгән ҙур ығы-зығы; бола, буталыш. *Кыран-кыйкыу килеү.* ■ *Карын алганда килендәр етешә алмай кыран-кыйкыу булды.* Һ. Дәүләтшина.

**ҠЫРАНЛАУ** *к. иҫк.* **1.** Ҡыйратыу, емереү. *Илде кыранлау.*

**2.** Ауырлыҡ, ыҙа кисереү, ыҙа сигеү.

**ҠЫРАНСЫЛ** *с.* Үлтереп, ҡырып барыусан. *Бик кырансыл бесәй, сысканды күп тота.*

**ҠЫРАН-ҺӨРӘН** *и. йыйн. диал.* Пыран-заран.

**ҠЫРАН-ҺӘЛӘКӘТ** *и. йыйн.* Үлеш-ҡырылыш, афәт. *Кыран-һәләкәт килтереү.*

**ҠЫРАН-ЯРАН: кыран-яран булыу** юҡҡа сығыу. **Ҡыран-яран итеү** пыран-заран ҡырыу, юҡ итеү. *«Нисек булһа ла юл табып, .. барыһын һыуҙан баҫтырып, кыран-яран итергә, Аҡбуҙатка менергә, Һомайҙы ла алырга, Әҙрәкәгә китергә», тиеп Шүлгән уйлаган.* «Урал батыр».

**ҠЫРАС** [1] *с.* Текә, үрә торған (йөнгә, ялға ҡарата). *Был илдәрҙең менер аткайҙары кырас яллы, көмрө билле икән* (Халыҡ йырынан).

**ҠЫРАС** [2] *и. кар.* **кыраз.**

**ҠЫРАСҠЫ** *и.*, **кыраскы кар** *диал.* Ҡырпаҡ.

**ҠЫРАУ** *и.* **1.** Ҡар булып төшкән ысыҡ. *Кырау тейеү. Кырау төшөү. Кырау һугыу.* ■ *Агиҙелкәйҙәрҙең аръягында карҙан каты төшкән кырау бар* (Халыҡ йырынан).

**2.** *күсм.* Сәскә төшкән сал. *Сәстәремә кырау сәселһә лә кырау кунмаҫ минең күңелгә.* З. Биишева.

♦ **Ҡара ҡырау** бәҫләнеп ергә яумаған ҡара һыуыҡ. *Кара кырау төшөр, ахыры, бөгәсә бик һыуык булды.*

**ҠЫРАУЛАНЫУ** *к.* **1.** Ҡырау йәки ҡылау менән ҡапланыу. *Кырауланган ер өҫтө. Кырауланган тәҙрә.*

**2.** *күсм.* Сал төшөү; салланыу. *Ах, сәстәрем минең, сәстәрем, кырауланды тамам сәстәрем.* К. Кинйәбулатова.

**ҠЫРАУЛАУ** *к.* Ҡырау төшөү. *Бөгөндәре кыраулар ахыры, һыуытып ебәрҙе.*

**ҠЫРАУҺЫТЫУ** *к. кар.* **кырауытыу.**

**ҠЫРАУЫҠ** *и.* Ҡырау төшә торған миҙгел. *Калушлы быйма — .. нәк ошо көҙгө кырауыкта кейә торган кейем.* Ғ. Вәлиев.

**ҠЫРАУЫТЫУ** *к.* Ҡырау, ҡылау менән ҡапланыу; бәҫләнеү. *Кырауыткан тәҙрә.* ■ *Был [ятак] бит кырауыткан ишекле серек өй түгел.* З. Биишева.

**ҠЫРАЯҠ** *и.* Көҙҙөң ҡар йоҡа, аяҡ аҫты ныҡ туң ваҡыты.

**ҠЫРҒАЛАҠ** *и. диал.* Кәйелтмәк.

**ҠЫРҒАЛАУ** *к. диал.* Кәйелеү.

**ҠЫРҒАУЫЛ** *и.* Тауыҡтар төркөмөнә ҡараған оҙон осло ҡойроҡло, атаһы көрәнһыу ҡыҙыл төҫлө эре ҡош.

● *Кыҙым балаһы — кыргауыл балаһы, улым балаһы — үҙәгем балаһы.* Әйтем.

**ҠЫРҒЫ** [1] *и.* Берәй нәмәне ҡыра торған ҡорал; ҡырғыс.

**ҠЫРҒЫ** [2] *с. иҫк.* Ҡырҙан килгән, сит, ят. *Ҡырғы кеше.*

● *Ҡырғы менән ҡолан аулама.* Мәҡәл. *Ҡырғының аты уҙғанса, күршенең тайы уҙһын.* Әйтем.

**ҠЫРҒЫҘ** *и.* Ҡырғыҙ станың төп халҡын тәшкил иткән милләт һәм шул милләттең бер кешеһе (төрки телдәрҙең береһендә һөйләшә). *Ҡырғыҙ халҡы. Ҡырғыҙ ҡатыны. Ҡырғыҙ теле.*

**ҠЫРҒЫҘСА** *р.* **1.** Ҡырғыҙ телендә. *Ҡырғыҙса һөйләшеү. Ҡырғыҙса уҡыу.*

**2.** Ҡырғыҙ халҡына хас. *Ҡырғыҙса бейеү. Ҡырғыҙса кейенеү.*

**ҠЫРҒЫЙ** *с. иҫк.* Ҡырҙан килгән; сит, ят. *[Сулпан:] Ҡолой ҡырғый түгел, уҙ ауылдашым.* Т. Хәйбуллин.

**ҠЫРҒЫН** *и.* **1.** Һуғыш, яуҙағы күмәк ҡырылыш. *Ҡырғын һалыу.* ■ *Башҡорттар менән заводсылар араһында Урал өсөн бик күп ҡырғын булған* (Хикәйәттән).

**2.** Халыҡты, малды күпләп үлтергән афәт. *Ҡырғын төшөү.* **Ҡырғын тейгер** (*йәки* **төшкөр**) ҡарғағанда әйтелә.

● *Ҡырҡ йыл ҡырғын булһа ла әжәл етмәй үлем юҡ.* Мәҡәл.

**ҠЫРҒЫС** *и.* **1.** Малды ҡырып таҙартыу өсөн ҡулланылған тешле ҡорал. *Ағас ҡырғыс. Тимер ҡырғыс.* ■ *Ябағаһын коя башлағанда, ҡолонды ҡырғыс менән таҙартып торорға кәрәк.* М. Ғөбәйҙуллин.

**2.** Өйҙө, иҙәнде ҡырып йыуа торған яҫы, ҡалын бысаҡ.

**3.** Ышҡып, йәшелсә ҡырыу өсөн ҡулланылған тишекле-тишекле ҡорал. *Ваҡ ҡырғыс. Эре ҡырғыс.*

**4.** Ҡыра, ҡырып таҙарта торған һәр төрлө башҡа ҡорал. *Скважина ҡырғысы.*

**5.** *диал. ҡар.* **ҡарлау 1.**

**ҠЫРҒЫСЛАТЫУ** *к. йөкм. ҡар.* **ҡырғыслау.** *Атты ҡырғыслатыу.*

**ҠЫРҒЫСЛАУ** *к.* Ҡырғыс (1 мәғ.) менән ҡырыу, ҡырып таҙартыу. *Атты ҡырғыслау.* ■ *Арслан ишек алдында ат ҡырғыслап тора.* С. Агиш.

**ҠЫРҒЫСЛАШЫУ** *к. урт. ярҙамл. ҡар.* **ҡырғыслау.**

**ҠЫР-ҒӘЛӘМӘТ** *и. диал.* Дыу-ғәләмәт. *Ҡыр-ғәләмәт килеү.*

**ҠЫРҘЫРЫУ** *к.* **1.** *йөкм. ҡар.* **ҡырыу** 1—5. *Һаҡалды ҡырҙырыу. Иҙәнде ҡырҙырыу.*

**2.** Ҡорал ярҙамында ниҙелер ҡырыу. *Тимерҙе игәү менән ҡырҙырыу.*

**ҠЫРЖАН** *с. диал.* Оҙон тороҡло (малға ҡарата).

**ҠЫРЖАУ** *с. диал.* Сабан.

**ҠЫРҠ** *төп һ.* **1.** 40 һаны. / Кем йәки нимәнеңдер 40-ҡа тиң иҫәбе. *Ҡырҡ кеше. Ҡырҡ китап. Ҡырҡ көн. Ҡырҡ йыл. Ҡырҡ йәш. Ҡырҡ һум.* ■ *Был байҙың ҡырҡ баш йылҡыһы булған* (Әкиәттән).

**2.** Һан һәм күләмдең юғары дәрәжәһен белдереү өсөн ҡулланыла; бик күп. *Ҡырҡ төрлө һөйләү. Ҡырҡ һүҙгә етеү. Ҡырҡ ҡорау быяла.* ■ *Уның [уҡытыусының] ҡулында ҡырҡ ата балаһы тупланған, ҡырҡына ҡырҡ төрлө көй кәрәк.* Ә. Гәрәев. **Ҡырҡмаһа** (*йәки* **ҡырылмаһа**) **ҡырҡ** самаһыҙ күп, иҫәпһеҙ күп. *Ҡырҡмаһа ҡырҡ кеше. Ҡырҡмаһа ҡырҡ төрлө эш.* ■ *Ҡымыҙ курорттарында ҡырҡмаһа ҡырҡ ерҙән һөт алып, ҡымыҙ әсетеүҙе тыйыр кәрәк.* М. Ғөбәйҙуллин.

**3.** *и. мәғ.* **ҡырҡы** Мосолман диненсә, кеше үлгәндең ҡырҡынсы көнөн билдәләп уҡылған аят. *Ҡырҡын уҡытыу. Ҡырҡын үткәреү. Ҡырҡына саҡырыу.*

♦ **Ҡырҡ ҡарта** (*йәки* **ҡатмар**) *диал. ҡар.* **ҡатлансыҡ. Ҡырҡ ҡорама, илле сөй** ниҙеңдер тарҡаулығын, берҙәм булмағанын белдергәндә әйтелә. *[Ямал:] Тыштан ғына колхоз инде, ә эсенән — ҡырҡ ҡорама, илле сөй.* М. Тажи. **Ҡырҡ ҡыуыҡ** *диал.* бойлоҡһоҙ. **Ҡырҡ сөйҙөң береһе ҡалмау** *ҡар.* **сөй. Ҡырҡ төргә инеү** кем менән аралашыуға, урынына ҡарап, ҡылыҡ-ҡиәфәтте төрлөгә үҙгәртеү. **Ҡырҡ һалма** *ҡар.* **һалма. Ҡырҡ ҡорама, ҡырҡ ямау** иҫкергән, туҙған нәмәләргә ҡарата әйтелә. **Үҙ ҡырҡы ҡырҡ** үҙ һүҙе генә һүҙ.

**ҠЫРҠА** *р.* **1.** Бик етеҙ хәрәкәт менән, ҡапыл. *Ҡулды ҡырҡа һелтәү.* ■ *[Ишбулдин] ҡырандаһына менеп ултырҙы ла дилбегәһен ҡырҡа тартты.* Ә. Вәли. / Ҡапыл, көтмәгәндә. *Минең бисәкәй улай ҡырҡа ҡыҙып китә торған ҡылтый-былтый кеше түгел.* С. Агиш. *Шушенскийҙа ай ҙа, йондоҙ ҙа юҡ, һауа китте ҡырҡа боҙолоп.* Р. Ниғмәти.

**2.** Киҫкен, ҡәтғи рәүештә. *Етешһеҙлектәрҙе ҡырҡа бөтөрөү. Сифатты ҡырҡа күтәреү. Ҡырҡа боролош яһау. Ҡырҡа баш тартыу. Ҡырҡа ҡаршы төшөү. Ҡырҡа әйтеү.* ■ *[Айбулат:] Ярар, Гөлйөҙөм, бөгөн ҡырҡа һөйләшәм дә, булмай икән, ташлап сыға ла китәбеҙ.* Һ. Дәүләтшина.

**ҠЫРҠАР** *бүл. һ.* Һәр бере ҡырҡҡа тиң. *Ҡырҡар дәфтәр. Ҡырҡар кеше.*

**ҠЫРҠАЯҠ** *и.* Дымлы, бысраҡ урындарҙа була торған ваҡ-ваҡ ҡына күп аяҡлы аҡһыл күк төҫтәге бөжәк.

**ҠЫРҠА-ЯРАН** *р. иҫк.* Ҡәтғи рәүештә. *Йәнбирҙе ҡарт улдарына йола өйрәтеп ҡуйған, ти, ҡан эсеүҙән балаларын ҡырҡа-яран тыйған, ти.* «Урал батыр».

**ҠЫРҠБЫУЫН** *и.* Йомшаҡ йәшел быуынтыҡ һабаҡлы, ылыҫ кеүек нәҙек япраҡлы, юғары төҙөлөшлө һеркәле үҫемлек; шыршы үлән. *Урман ҡырҡбыуыны. Ялан ҡырҡбыуыны.*

**ҠЫРҠҠОЛАС** *и.* Роза сәскәлеләр ғаиләһенә ҡараған, башы ҡара ҡыҙыл тумалаҡ емешле, оҙон, ныҡ тарбағай һабаҡлы урман үләне. *Урман эстәрендә сылтырбаштан онотмайыҡ кәпәс яһауҙы, ҡырҡҡоластан аша һикереп йөрөп, бөрлөгәндәр тиреп ашауҙы.* Х. Ғәбитов.

**ҠЫРҠҠЫ** *и.* Һарыҡ, кәзә йөнөн ҡырҡа торған ҙур ҡайсы.

**ҠЫРҠҠЫЛАУ** *к.* Өлөш-өлөшкә ҡырҡыу; турау. *Ҡағыҙҙы ҡырҡҡылау.*

**ҠЫРҠҠЫС** [1] *и.* **1.** Тимер ҡырҡа торған ҡалын ҡасау һымаҡ ҡорал.

**2.** Ҡырҡа торған яҫы үткер уҡ башағы. *Ҡырҡ-*

**ҠЫРҒЫ** [1] *и.* Верәй нәмәне ҡыра торған ҡорал; ҡырғыс.

**ҠЫРҒЫ** [2] *с. иҫк.* Ҡырҙан килгән, сит, ят. *Ҡырғы кеше.*

● *Ҡырғы менән ҡолан аулама.* Мәҡәл. *Ҡырғының аты уҙғанса, күршенең тайы уҙһын.* Әйтем.

**ҠЫРҒЫҘ** *и.* Ҡырғыҙ станың төп халҡын тәшкил иткән милләт һәм шул милләттең бер кешеһе (төрки телдәрҙең береһендә һөйләшә). *Ҡырғыҙ халҡы. Ҡырғыҙ ҡатыны. Ҡырғыҙ теле.*

**ҠЫРҒЫҘСА** *р.* **1.** Ҡырғыҙ телендә. *Ҡырғыҙса һөйләшеү. Ҡырғыҙса уҡыу.*

**2.** Ҡырғыҙ халҡына хас. *Ҡырғыҙса бейеү. Ҡырғыҙса кейенеү.*

**ҠЫРҒЫЙ** *с. иҫк.* Ҡырҙан килгән; сит, ят. *[Сулпан:] Ҡолой ҡырғый түгел, уҙ ауылдашым.* Т. Хәйбуллин.

**ҠЫРҒЫН** *и.* **1.** Һуғыш, яуҙағы күмәк ҡырылыш. *Ҡырғын һалыу.* ■ *Башҡорттар менән заводсылар араһында Урал өсөн бик күп ҡырғын булған* (Хикәйәттән).

**2.** Халыҡты, малды күпләп үлтергән афәт. *Ҡырғын төшөү.* **Ҡырғын тейгер** (*йәки* **төшкөр**) ҡарғағанда әйтелә.

● *Ҡырҡ йыл ҡырғын булһа ла әжәл етмәй үлем юҡ.* Мәҡәл.

**ҠЫРҒЫС** *и.* **1.** Малды ҡырып таҙартыу өсөн ҡулланылған тешле ҡорал. *Ағас ҡырғыс. Тимер ҡырғыс.* ■ *Ябағаһын ҡоя башлағанда, ҡолонды ҡырғыс менән таҙартып торорға кәрәк.* М. Ғөбәйҙуллин.

**2.** Өйҙө, иҙәнде ҡырып йыуа торған яҫы, ҡалын бысаҡ.

**3.** Ышҡып, йәшелсә ҡырыу өсөн ҡулланылған тишекле-тишекле ҡорал. *Ваҡ ҡырғыс. Эре ҡырғыс.*

**4.** Ҡыра, ҡырып таҙарта торған һәр төрлө башҡа ҡорал. *Скважина ҡырғысы.*

**5.** *диал. ҡар.* **ҡарлау 1.**

**ҠЫРҒЫСЛАТЫУ** *ҡ. йөкм. ҡар.* **ҡырғыслау.** *Атты ҡырғыслатыу.*

**ҠЫРҒЫСЛАУ** *ҡ.* Ҡырғыс (1 мәғ.) менән ҡырыу, ҡырып таҙартыу. *Атты ҡырғыслау.* ■ *Арслан ишек алдында ат ҡырғыслап тора.* С. Агиш.

**ҠЫРҒЫСЛАШЫУ** *ҡ. урт. ярҙамл. ҡар.* **ҡырғыслау.**

**ҠЫР-ҒӘЛӘМӘТ** *и. диал.* Дыу-ғәләмәт. *Ҡыр-ғәләмәт килеү.*

**ҠЫРҘЫРЫУ** *ҡ.* **1.** *йөкм. ҡар.* **ҡырыу 1—5.** *Һаҡалды ҡырҙырыу. Иҙәнде ҡырҙырыу.*

**2.** Ҡорал ярҙамында ниҙелер ҡырыу. *Тимерҙе игәү менән ҡырҙырыу.*

**ҠЫРЖАН** *с. диал.* Оҙон тороҡло (малға ҡарата).

**ҠЫРЖАУ** *с. диал.* Сабан.

**ҠЫРҠ** *төп һ.* **1.** 40 һаны. / Кем йәки нимәнеңдер 40-ҡа тиң иҫәбе. *Ҡырҡ кеше. Ҡырҡ китап. Ҡырҡ көн. Ҡырҡ йыл. Ҡырҡ йәш. Ҡырҡ һум.* ■ *Был байҙың ҡырҡ баш йылҡыһы булған* (Әкиәттән).

**2.** Һан һәм күләмдең юғары дәрәжәһен белдереү өсөн ҡулланыла; бик күп. *Ҡырҡ төрлө һөйләү. Ҡырҡ һүҙгә етеү. Ҡырҡ ҡорау быяла.* ■ *Уның [уҡытыусының] ҡулында ҡырҡ ата балаһы тупланған, ҡырҡына ҡырҡ төрлө көй кәрәк.* Ә. Гәрәев. **Ҡырҡмаһа** (*йәки* **ҡырылмаһа**) **ҡырҡ** самаһыҙ күп, иҫәпһеҙ күп. *Ҡырҡмаһа ҡырҡ кеше. Ҡырҡмаһа ҡырҡ төрлө эш.* ■ *Ҡымыҙ курорттарында ҡырҡмаһа ҡырҡ ерҙән һөт алып, ҡымыҙ әсетеүҙе тыйыр кәрәк.* М. Ғөбәйҙуллин.

**3.** *и. мәғ.* **ҡырҡы** Мосолман диненсә, кеше үлгәндең ҡырҡынсы көнөн билдәләп уҡылған аят. *Ҡырҡын уҡытыу. Ҡырҡын үткәреү. Ҡырҡына саҡырыу.*

◆ **Ҡырҡ ҡарта** (*йәки* **ҡатмар**) *диал. ҡар.* **ҡатлансыҡ. Ҡырҡ ҡорама, илле сөй** ниҙеңдер тарҡаулығын, берҙәм булмағанын белдергәндә әйтелә. *[Ямал:] Тыштан ғына колхоз инде, ә эсенән — ҡырҡ ҡорама, илле сөй.* М. Тажи. **Ҡырҡ ҡыуыҡ** *диал.* бойлоҡһоҙ. **Ҡырҡ сөйҙөң береһе ҡалмау** *ҡар.* **сөй. Ҡырҡ төргә инеү** кем менән аралашыуға, урынына ҡарап, ҡылыҡ-ҡиәфәтте төрлөгә үҙгәртеү. **Ҡырҡ һалма** *ҡар.* **һалма. Ҡырҡ ҡорама, ҡырҡ ямау** иҫкергән, туҙған нәмәләргә ҡарата әйтелә. **Үҙ ҡырҡы ҡырҡ** үҙ һүҙе генә һүҙ.

**ҠЫРҠА** *р.* **1.** Бик етеҙ хәрәкәт менән, ҡапыл. *Ҡулды ҡырҡа һелтәү.* ■ *[Ишбулдин] ҡырандасына менеп ултырҙы ла дилбегәһен ҡырҡа тартты.* Ә. Вәли. / Ҡапыл, көтмәгәндә. *Минең бисәкәй улай ҡырҡа ҡыҙып китә торған ҡылтый-былтый кеше түгел.* С. Агиш. *Шушенскийҙа ай ҙа, йондоҙ ҙа юҡ, һауа китте ҡырҡа боҙолоп.* Р. Ниғмәти.

**2.** Киҫкен, ҡәтғи рәүештә. *Етешһеҙлектәрҙе ҡырҡа бөтөрөү. Сифатты ҡырҡа күтәреү. Ҡырҡа боролош яһау. Ҡырҡа баш тартыу. Ҡырҡа ҡаршы төшөү. Ҡырҡа әйтеү.* ■ *[Айбулат:] Ярар, Гөлйөҙөм, бөгөн ҡырҡа һөйләшәм дә, булмай икән, ташлап сыға ла китәбеҙ.* Һ. Дәүләтшина.

**ҠЫРҠАР** *бүл. һ.* Һәр бере ҡырҡҡа тиң. *Ҡырҡар дәфтәр. Ҡырҡар кеше.*

**ҠЫРҠАЯҠ** *и.* Дымлы, бысраҡ урындарҙа була торған ваҡ-ваҡ ҡына күп аяҡлы аҡһыл күк төҫтәге бөжәк.

**ҠЫРҠА-ЯРАН** *р. иҫк.* Ҡәтғи рәүештә. *Йәнбирҙе ҡарт улдарына йола өйрәтеп ҡуйған, ти, ҡан эсеүҙән балаларын ҡырҡа-яран тыйған, ти.* «Урал батыр».

**ҠЫРҠБЫУЫН** *и.* Йомшаҡ йәшел быуынтыҡ һабаҡлы, ылыҫ кеүек нәҙек япраҡлы, юғары төҙөлөшлө һеркәле үҫемлек; шыршы үлән. *Урман ҡырҡбыуыны. Ялан ҡырҡбыуыны.*

**ҠЫРҠҠОЛАС** *и.* Роза сәскәлеләр ғаиләһенә ҡараған, башы ҡара ҡыҙыл тумалаҡ емешле, оҙон, ныҡ тарбағай һабаҡлы урман үләне. *Урман эстәрендә сылтырбаштан онотмайыҡ кәпәс яһауҙы, ҡырҡҡоластан аша һикереп йөрөп, бөрлөгәндәр тиреп ашауҙы.* Х. Ғәбитов.

**ҠЫРҠҠЫ** *и.* Һарыҡ, кәзә йөнөн ҡырҡа торған ҙур ҡайсы.

**ҠЫРҠҠЫЛАУ** *ҡ.* Өлөш-өлөшкә ҡырҡыу; турау. *Ҡағыҙҙы ҡырҡҡылау.*

**ҠЫРҠҠЫС** [1] *и.* **1.** Тимер ҡырҡа торған ҡалын ҡасау һымаҡ ҡорал.

**2.** Ҡырҡа торған яҫы үткер уҡ башағы. *Ҡырҡ-*

*ҡыс менән ҡырҡтыҡ уғын яҙа атҡандың.* Р. Бикбаев.

**ҠЫРҠҠЫС** [2] *с.* Йомош кеүек нәмәгә бик ҡаты, ныҡ һаран. *Ҡырҡҡыс кеше.*

**ҠЫРҠҠЫСА** *и. ҡар.* **ҡырҡҡыс** [1] 2.

**ҠЫРҠҠЫСЛАУ** *ҡ. ҡар.* **ҡырҡҡылау.**

**ҠЫРҠЛАП** *сама һ.* Ҡырҡ тирәһе, ҡырҡҡа яҡын. *Ҡырҡлап баш һарыҡ. Ҡырҡлап кеше.*

**ҠЫРҠМА** *и. диал. ҡар.* **ҡырҡҡыс** [1] 2.

**ҠЫРҠМЫШ** [1] *с.* Ялы, ҡойроғо ҡырҡыулы (тайға ҡарата). *[Ғабдулла] берҙән-бер ҡырҡмыш тайын колхозға илтеп бирҙе.* Д. Исламов. *Сабышырға киткән аттарҙың күбеһе быға ҡамыт кирмәгән ҡырҡмыш булды.* Ж. Кейекбаев.

**ҠЫРҠМЫШ** [2] *с. ҡар.* **ҡырҡҡыс** [2]. *Аҡколайҙа берәй кеше һаранланып, бәгзе нәмәһен йәлләп торһа: «Кит, ҡырҡмыш Йәмиләләй булып тораһың тағы»,— ти ҙә ҡуялар.* Т. Килмөхәмәтов.

**ҠЫРҠТАМЫР** *и.* Тәлмәрйен тәңкәһе һымаҡтар ғаиләһенә ҡараған, күлдә йөҙөп йөрөгән ваҡ ҡына аҡ тамырлы, түңәрәк япраҡлы үлән.

**ҠЫРҠТАРТМА** *и. иҫк.* Ауыл һайын күтәреп йөрөп, ваҡ-төйөк нәмә һатыу өсөн йәтешләнгән күп тартмалы һандыҡ. *Ишектең бер яғында дүрткел һары һандыҡ тора ине. Был ҡырҡтартма булып сыҡты. Хәлфә минең шул һандыҡты күтәреп, йәйләүҙәрҙә ваҡ-төйәк тауар һатып йөрөргә тейешлегемде әйтте.* Ғ. Ғүмәр.

**ҠЫРҠТАРТМАСЫ** *и. иҫк.* Ҡырҡтартма күтәреп, ауыл һайын һатыу итеп йөрөгән ваҡ сауҙагәр. *[Зәлифә:] Бына, еңгәм миңә үҙенең исеме яҙылғанды бирҙе. Ә һинеке — ҡырҡтартмасынан алған балдаҡ. Көмөш тә түгелдер әле.* Һ. Дәүләтшина.

**ҠЫРҠТЫРЫУ** *ҡ.* **1.** *йөкм. ҡар.* **ҡырҡыу** 1, 2, 4, 6, 7. *Утын ҡырҡтырыу.*

**2.** *ҡар.* **ҡырҡыу** 1, 3. *[Әбей:] Урма, бармағыңды ҡырҡтырып ҡуйырһың.* М. Тажи.

**ҠЫРҠЫЛСАН** *и.* Тән тиреһен ҡырҡа, сәсте ҡоя торған йоғошло тимрәү.

**ҠЫРҠЫЛЫУ** *ҡ.* **1.** *төш. ҡар.* **ҡырҡыу** [1] 1—9. *Ҡырҡылған ағас.* ■ *Әҙәм үткеһеҙ ҡалын урмандар ҡырҡылып бөткән.* Б. Бикбай.

**2.** Ҡырҡҡан хәлдә булыу. *Әлек ни, бер ер ҡырҡылһа, көл һалып, яра ташы ҡырып, аҙҙырып йөрөгәнбеҙ икән.* С. Агиш.

**3.** Һынып, сатнап туҙыу. *[Ҡыҙҙың] өҫтөндә .. керенә ҡырҡылып бөткән киндер күлдәк.* К. Ибәтуллин.

**4.** *күсм.* Ҡаҡшау, киңгәү. *Аҫҡа ҡырҡылыу. Ауыр эш менән ҡырҡылып бөтөү.*

**ҠЫРҠЫМ** *и.* Ҡырҡып алынған киҫәк. *Бер ҡырҡым ит.* ■ *Тәрилкәләрҙә .. икешәр ҡырҡым ҡаҙы ла бар.* Н. Мусин.

**ҠЫРҠЫМЛАУ** *ҡ.* Ҡырҡып-ҡырҡып киҫәкләү, өләшләү. *Ҡырҡымлап бүлеү.*

**ҠЫРҠЫН** [1] *и.* Үләнен мал ашап бөткән көтөүлек. *Быҙау ҡырҡында йөрөй.*

**ҠЫРҠЫН** [2] *и.* Ҡырҡыуға тәғәйенләп бүленгән урман өлөшө. *Ҡырҡын алыу. Ҡырҡын ҡырҡыу.*

**ҠЫРҠЫН** [3] *и. ҡар.* **ҡырғын.**

● *Ҡырҡ йыл ҡырҡын булһа, әжәлһеҙ үлем булмаҫ.* Әйтем.

**ҠЫРҠЫНДЫ** [1] *и.* Ҡырҡҡандан ҡалған ваҡ-төйәк киҫәк. *Тауар ҡырҡындыһы. Ағас ҡырҡындыһы.*

**ҠЫРҠЫНДЫ** [2] *и.* Ағасы ҡырҡылған урын.— *Ҡырҡынды яна! Тиҙерәк! Унда .. ҡайын сыбығы! Таҡталар!..,— тип, [Нарат] төтөн килгән яҡҡа ташланды.* Ф. Әсәнов.

**ҠЫРҠЫНДЫҠ** *и. диал. ҡар.* **ҡырҡынды** [1].

**ҠЫРҠЫНСАЛ** *и. диал.* Ҡырҡылсан.

**ҠЫРҠЫНСЫ** *рәт һ.* Урын тәртибе 40 менән билдәләнгән. *Ҡырҡынсы өй.*

**ҠЫРҠЫУ** [1] *ҡ.* **1.** Ҡулланғанда ярып, киҫеп үтеп инеү (үткер ҡоралға ҡарата). *Бысаҡ яҡшы ҡырҡа. Ҡайсы үтмәҫләнгән, ҡырҡмай.*

**2.** Үткер ҡорал менән айырып, өҙөү. *Бауҙы ҡырҡыу. Ҡайсы менән ҡырҡыу. Уйып ҡырҡыу.*

**3.** Үткер нәмә менән йәрәхәтләү. *Аяҡты ҡырҡыу. Ҡулды ҡырҡыу.*

**4.** Үткер ҡорал менән үҫеп ултырғанды төптән киҫеү, киҫеп, өҙөп ауҙарыу. *Ағасты ҡырҡыу. Балта менән ҡырҡыу. Ҡурай ҡырҡып алыу.* ■ *Ай Уралым, һинән ҡырҡып алһам, ат ҡыуырҙай яңғыҙ талдарың, тамып та ғына ҡала ҡырҡҡан саҡта яуҙа үлгән батыр ҡандары* (Халыҡ йырынан). / Ағасты күпләп төптән ауҙарыу. *Бурәнә ҡырҡыу. Урман ҡырҡыу. Әрҙәнә ҡырҡыу.* ■ *Айбулат ҡарт ғүмер буйы ерек ҡырҡҡан да күмер үртәгән* (Әкиәттән).

**5.** Үткер ҡорал менән өлөш-өлөшкә, киҫәк-киҫәккә бүлеү; турау. *Бауырһаҡ ҡырҡыу. Гукмас ҡырҡыу. Утын ҡырҡыу.* ■ *Емеш шаҡмаҡ-шаҡмаҡ итеп һалма ҡырҡырға кереште.* З. Биишева.

**6.** Ниҙелер аша үтеп, икегә айырыу; бүлеү. *Тауҙы ҡырҡып үткән йылға.*

**7.** Ерҙең бер өлөшөн бүлеп айырыу. *Батша хөкүмәте иң яҡшы ерҙәрҙе баярҙарға ҡырҡып бирҙе.* Һ. Дәүләтшина. / Бер өлөш бүлеп алыу, алып кәметеү. *Эш хаҡын ҡырҡыу.*

**8.** *күсм.* Кимереп, йырып ашау. *Бөйкәны көйә ҡырҡа. Китапты сысҡан ҡырҡҡан.*

**9.** *күсм.* Әсеттереп, яндырып ауырттырыу. *Битте ел ҡырҡа.* / Баҫып, өйкәп ауырттырыу. *Роғатҡалар яурынды баҫа, яурын һөйәген ҡырҡа.* Д. Юлтый. / Әрнетеп ғазапландырыу. *Йөрәкте асыу ҡырҡа.* ■ *Һыҙлата, бәгеремде ҡырҡа эскә батҡан күҙҙәрең.* Т. Йәнәби.

**10.** *күсм.* Булмышын, барышын өҙөп, юҡ итеү. *Маҡсатты ҡырҡыу.* ■ *Улар Аҡназарҙың өмөтөн ҡырҡырға, күңелен һүрелтергә, ҡарыуын ҡайтарырға аҙаплана.* Ғ. Дәүләтшин.

**11.** Хәл ҡылымдың *-ып* формаһында килеп, эш-хәрәкәттең ҡәтғилеген белдерә. *Ҡырҡып әйтеү.* ■ *Ҡәлмәт ағай ҡырҡып ҡына яуап бирә алманы.* К. Мәргән.

◆ **Аҫтан ҡырҡыу** *шул уҡ* **аҫтан киҫеү** (*ҡар.* **киҫеү**). **Аҫтан ҡырҡып, өҫтән ямау** *шул уҡ* **аҫтан киҫеп, өҫтән ямау** (*ҡар.* **киҫеү**). **Йылан аяғын ҡырҡҡан** *шул уҡ* **йылан аяғын киҫкән** (*ҡар.* **йылан**). **Ҡырҡа һуғыу** ҡәтғи рәүештә өҙөү, кире ҡағыу. **Ҡырҡмаға ҡараһы юҡ** бик ныҡ һимеҙ (иткә ҡарата). *Колондоң итен ашап кинәндек. Һимеҙ килеп тороп. .. Итенең ҡырҡмаға ҡараһы юҡ.* Һ. Дәүләтшина. **Ҡырҡһаң, ҡаны сыҡмаҫ** бик нык һаран. *Кеше менән аралашмаҫ, ҡырҡһаң ҡаны сыҡмаҫ бәндә ине.* Н. Мусин. **Үлсәп**

ҡырҡҡан кеүек тап-таман. *Таҡта ҡалай йәтеш тап килде, үлсәп ҡырҡҡан кеүек булды.*

● *Ағас ҡырҡһаң, оҙон ҡырҡ: ҡырҡа-ҡырҡа ҡыҫҡарыр; тимер ҡырҡһаң, ҡыҫҡа ҡырҡ: һуға-һуға оҙайыр.* Әйтем. *Йәтим бала үҙ кендеген үҙе ҡырҡыр.* Мәҡәл.

**ҠЫРҠЫУ**² *с.* **1.** Тамаҡты, танауҙы ҡырҡырҙай әсе. *Ҡырҡыу еҫ. Ҡырҡыу икмәк.* ■ *Аш үҙе әсе, үҙе әллә нисек ҡырҡыу булып бешкән һымаҡ.* Ғ. Ибраһимов. / Үҙәккә үтерлек һыуыҡ, әсе (елгә ҡарата). *Матросов яҙғы ҡырҡыу елдән ышыҡланып, ағас төбөндә ултыра ине.* Ә. Бикчәнтәев.

**2.** Ҡәтғи һәм ҡаты. *Ҡырҡыу һорау. Ҡырҡыу һүҙ. // Ҡырҡыу һөйләшеү.* ■ *Ғилмандың ҡырҡыу, ышаныслы яуабы Юлдашҡа ныҡ тәьҫир итте.* З. Биишева. *Ирочка ҡырҡыу ғына итеп һорау бирҙе.* Д. Юлтый.

**3.** Ҡәтғи, ҡырыҫ ҡыланыусан. *Ҡырҡыу кеше.* ■ *Күп йыллыҡ етәкселек эше уны шулай ҡырҡыуыраҡ тәбиғәтле, өҙә әйтеп һөйләшеүсән кеше иткән.* Ғ. Шәрипов.

**4.** Ҡатмарлы, көсөргәнешле; киҫкен. *Ҡырҡыу мөнәсәбәт. Ҡырҡыу көрәш. Ҡырҡыу хәл. Ҡырҡыу мәсьәлә.*

**ҠЫРҠЫУЛАНДЫРЫУ** *ҡ.* **1.** Ҡырҡыуға, әсегә әйләндереү, ҡырҡыу итеү. *Балды ҡырҡыуландырыу.*

**2.** Ҡәтғи, ҡатыға әйләндереү, ҡәтғи итеү. *Тауышты ҡырҡыуландырыу. Һүҙҙе ҡырҡыуландырыу.*

**ҠЫРҠЫУЛАНЫУ** *ҡ.* **1.** Әсе тәм, әсе еҫ инеп, ҡырҡыуға әйләнеү; ҡырҡыу булыу. *Ҡамыр ҡырҡыуланған. Бал ҡырҡыуланған.* / Һыуыҡ, әсегә әйләнеү (елгә ҡарата).

**2.** Ҡәтғи, ҡатыға әйләнә, ҡәтғи булыу. *Тауышы ҡырҡыуланды.* ■ *[Сабитов] һүҙенең башында уҡ ҡырҡыуланды, .. сәнскеле һорауҙар бирә башланы.* А. Таһиров.

**ҠЫРҠЫУЛАШТЫРЫУ** *ҡ.* Ҡатмарлы, көсөргәнешлегә әйләндереү, киҫкен төҫ биреү; киҫкенләштереү. *Хәлде ҡырҡыулаштырыу.*

**ҠЫРҠЫУЛАШЫУ** *ҡ.* Ҡатмарлы, көсөргәнешле, киҫкен төҫ алыу; киҫкенләшеү. *Көрәш ҡырҡыулаша. Ҡаршылыҡтар ҡырҡыулаша. Хәл ҡырҡыулаша.*

**ҠЫРҠЫУЛЫ** *с.* Ҡырҡып, әҙерләп ҡуйылған. *Ҡырҡыулы һалма.*

**ҠЫРҠЫШЫУ** *ҡ.* **1.** *урт. ярҙамл. ҡар.* **ҡырҡыу**¹ 2, 4, 6, 7. *Ағас ҡырҡышыу. Һалма ҡырҡышыу. Утын ҡырҡышыу.*

**2.** Үҙ-ара береһен-береһе аша үтеү; киҫешеү. *Ҡырҡышыу нөктәһе. Ҡырҡышҡан һыҙыҡтар.*

**3.** *күсм.* Ҡаршылашып, һүҙ көрәштереү; еңешеү. *[Хөсәйен:] Бик һәйбәт булды әле, күҙ күргән кеше булмаһа ла, артыҡ ҡырҡышып тормай, тейәренә генә бирҙе лә ебәрҙе.* Ф. Иҫәнғолов.

**4.** *диал.* Маташыу.

**ҠЫРЛА**¹ *и.* Ҡырлы тау һырты. *Бер тауҙы артылып, оҙон ҡырлаға менгәс кенә ятып тын алдым.* Й. Солтанов.

**ҠЫРЛА**² *и. диал. ҡар.* **ҡырлыҡ**².

**ҠЫРЛАЙ** *и. ҡар.* **ҡырҡтартмасы.**

**ҠЫРЛАЙСЫ** *и.* Алам-һаламға ваҡ-төйәк нәмә алмашып, ауыл һайын йөрөгән һатыусы. *Йәш сағында ул [Иртуғанов] ҡырлайсы булған, тартмаларын артмаҡлап, ярты Рәсәйҙе ҡыҙырып сыҡҡан.* Д. Юлтый.

**ҠЫРЛАН** *и.* **1.** Йорттоң ҡыйығы аҫтынан буйҙан-буй киртләсләп ҡаҡҡан таҡта.

**2.** Мейестең иң өҫкө киртләсле өлөшө.

**ҠЫРЛАНЫУ** *ҡ.* **1.** *төш. ҡар.* **ҡырлау**¹. *Ҡырланған таш.*

**2.** Ҡырлыға әйләнеү, ҡырлы булыу. *Ҡырланып тороу.* ■ *Ҡурайҙың тышҡы яғы башта йәшел төҫтә булып, үҙәктән ҡырланып үҫә.* Ғ. Сөләймәнов.

**ҠЫРЛАС**¹ *с.* Ҡырланып торған; ҡырлы. *Ҡырлас ҡая. Ҡырлас танау. Ҡырлас тау.* ■ *Һәр ағасың, ташың кәрҙәш миңә, Уралҡайым, ҡырлас үргенәм.* М. Уразаев.

**ҠЫРЛАС**² *и.* Тауҙың ҡырлы һырт буйы. *Тау ҡырласы.* ■ *Бынау ҡырлас буйлап үттеме икән урман ҡырҡа йөрөгән һуҡмаҡтар?* М. Тажи.

**ҠЫРЛАСА** *и. диал. ҡар.* **ҡырлыҡ**².

**ҠЫРЛАТЫУ** *ҡ.* **1.** Нимәнеңдер ситенән, ҡырынан буйлатыу. *Урман ҡырлатып барыу.* ■ *Тау ҡырлатып ятҡан берләм һуҡмаҡ менән бер-ике саҡрым үткәс, алда асыҡлыҡ күренде.* Ә. Вахитов. *Яр ҡырлатып оҫҡан ҡарсығалай күк юрғаның алып елеүе.* Ҡ. Даян.

**2.** *диал. ҡар.* **бауырлау** 2. *Ерәнсәкәй аттың ай елеше ер ҡырлатып оҫҡан ҡош кеүек* (Халыҡ йырынан).

**ҠЫРЛАУ**¹ *ҡ.* Сит-ситтән юнып, ҡыр яһау. *Свердловскиҙағы таш ҡырлау фабрикаһы Мулдаҡай йәшмәһенән Ленинградтағы эрмитажға төрлө биҙәү әйберҙәре эшләп бирҙе.* М. Хисмәтов.

**ҠЫРЛАУ**² *ҡ.* **1.** Ниҙеңдер ситенән, ҡырынан буйлау. *Тау ҡырлап ҡайтыу.* ■ *Һәүбән яр ҡырлап ҡына шыуышып барып ҡараһа, бер ҡыҙ сәс тарап ултыра, ти.* «Аҡбуҙат».

**2.** *күсм.* Уранғылап һағалау; тирәләү. *[Сафуан:] Мин һиҙәм, Тайфур, һин дә Асияны ҡырлайһың. Ләкин һин Асия менән минең араға инмә инде.* Ҡ. Даян.

**3.** *диал.* Яҡынлау. *Мин хәҙер етмешкә ҡырланым.*

**ҠЫРЛАУ**³ *и. ҡар.* **ҡырла**¹.

**ҠЫРЛУТ** *и.* Сираждар ғаиләһенә ҡараған аҡ йәки алһыу сәскәле, япрағы менән тамыры ағыулы һаҙ үләне.

**ҠЫРЛЫ** *с.* Сит-сите мөйөшләнеп, ҡыр булып сығып торған. *Алты ҡырлы арпа. Күп ҡырлы мөйөш. Ҡырлы стакан.* ■ *Ер битендә ни хәтле таш ята — төрлө ҡырлы, төрлө төҫлөләр.* Р. Басимов.

**ҠЫРЛЫҠ**¹ *и.* **1.** Кәнәфер һымаҡтар ғаиләһенә ҡараған өс ҡырланып торған ваҡ ҡара орлоҡло ҡый үләне.

**2.** Игенде елгәргәндә төшкән ҡый. *[Әфтәх:] Беҙ ҙә байҙың һолоһон, көрпәһен, ҡырлығын урлап, шуны үҙ аттарына ашата торғайныҡ.* С. Агиш.

**ҠЫРЛЫҠ**² *и.* Баштарын уртаға, төйҙәләрен дүрт яҡ ситкә ҡуйып һалынған көлтә өйөмө. *Ҡырлыҡҡа һалыу.* ■ *Хәлле халыҡ [ашлығын] урып өлгөргән, ҡырлыҡ, ҙурат һалған.* Ғ. Ибраһим-Ҡыпсаҡ.

**ҠЫРЛЫҠЛАНЫУ** *к. төш. кар.* **ҡырлыҡлау.** *Ҡырлыҡланған көлтәләр.*

**ҠЫРЛЫҠЛАТЫУ** *к. йөкм. кар.* **ҡырлыҡлау.** *Көлтәләрҙе ҡырлыҡлатыу.*

**ҠЫРЛЫҠЛАУ** *к.* Ҡырлыҡ[2] итеп өйөү. *Көлтәләрҙе ҡырлыҡлау.*

**ҠЫРЛЫҠЛАШЫУ** *к. урт. ярҙамл. кар.* **ҡырлыҡлау.** *Көлтәләрҙе ҡырлыҡлашыу.*

**ҠЫРЛЫ-МЫРЛЫ** *с.* **1.** *һөйл.* Тигеҙһеҙ, ҡыр, һырҙары ҡалҡып сығып торған. *Ҡырлы-мырлы таш.*

**2.** *р. мәғ. диал.* Кирле-мирле. *Ҡырлы-мырлы һөйләшеү.*

**ҠЫРМА**[1] *с.* Йәнлек тиреһе менән ситләнгән; ҡырпыулы. *Ҡырма кәпәс.* ■ *[Муллаян] башына ҡырылып бөткән ҡырма бүрек, аяғына ситек--ката кейгән.* Б. Бикбай.

**ҠЫРМА**[2] *с. һөйл.* Ҡырып ҡуйылған, ҡырылған. *Ҡырма һаҡал.* / Ҡырып яһалған. *Ҡырма табаҡ.*

**ҠЫРМА**[3] *с.* Өс ҡырлы (уҡ башағына ҡарата). *Ҡарабай ғәйрәтләнеп, ҡырма башаҡлы уғын янына ҡуя ла, керешен тарта.* «Ҡуҙыйкүрпәс менән Маянһылыу».

**ҠЫРМА**[4] *с. һөйл.* Трахома.

**ҠЫРМАУЫҠ** *и. диал.* Дегәнәк.

**ҠЫРМЫҘЫ** [*фарс.*] *с. иҫк.* Ҡыҙыл.

◆ **Ҡырмыҙы сапан** йоҡа ғына мамыҡ һалып һырыған боронғо ҡыҙыл сапан.

**ҠЫРМЫҪҠА** *и.* Сүп-сарҙан оя өйөп, ил булып йәшәгән ер бөжәге. *Ҡара ҡырмыҫҡа. Һары ҡырмыҫҡа. Ваҡ ҡырмыҫҡа. Ҡырмыҫҡа иләүе. Ҡырмыҫҡа майы.* ■ *Ҡырмыҫҡалар, күпме ҡырмыҫҡалар ҡанатланып сыҡҡан иләүҙән.* Р. Ғарипов. *Ҡырмыҫҡа ҡанатлана башлаһа, көн яуынға әйләнә.* Һынамыш. **Айыу ҡырмыҫҡаһы** бик эре ҡара ҡырмыҫҡа.

◆ **Ҡырмыҫҡа иләүенә таяҡ тығыу** шау-шыуҙы, талаш-тартышты тағы көсәйтеүгә бер сәбәп сығарыу; ҡуҙғытыу.

**ҠЫРПА** *и.* Бикреләр ғаиләһенә ҡараған кимәтле, аҡ буҙ төҫтәге иң эре диңгеҙ һәм йылға балығы.

**ҠЫРПАҠ** *и.* **1.** (*йәки* **ҡырпаҡ ҡар**) Ерҙе туңдырғас, төшкән йоҡа йәш ҡар. *Ҡырпаҡ төшкәс, халыҡ һуғым һуйғас, .. ебәреп тор күстәнәстәр.* Б. Вәлит. *Ҡырпаҡ ҡарҙа бүре эҙе ҡалған, һунарсылар юллай төшкәндәр.* Б. Бикбай. / Шул ҡар төшкән миҙгел. *Көҙгө ҡырпаҡта утын ташып ҡалайыҡ.* Т. Морат.

**2.** *күсм.* Сәскә төшкән сал. *Хәстәрем бар, хәстәрем бар, ҡырпаҡ төшкән сәстәрем бар.* М. Кәримов.

**ҠЫРПАҠЛАНЫУ** *к.* Ҡырпаҡ ҡар менән ҡапланыу. *Ҡырпаҡланған ҡыр.*

**ҠЫРПАҠЛАУ** *к.* Ҡырпаҡ ҡар менән ҡаплау. *Туңғаҡ ерҙе ап-аҡ итеп ҡырпаҡлап, тәңкә-тәңкә ҡарҙар яуа.* Ғ. Ибраһимов.

**ҠЫРПЫУ** *и.* **1.** Кейемдең сит-ситенә тирәсләп тегелгән тире йәки бәрхәт. *Ҡама ҡырпыу.* ■ *«Был ағайға минең тире тун, сыҫҡан ҡырпыулы кәпәс ҡыҙыҡ күрендеме әллә»,— тип уйланым мин.* С. Кулибай. *Ҡара ҡырпыу үңлегенде нағышларбыҙ, юрғам* (Халыҡ йырынан).

**2.** *диал.* Күрпә.

**ҠЫРПЫУЛАНЫУ** *к. төш. кар.* **ҡырпыулау.** *Аҡ бәрән менән ҡырпыуланған йәшел тышлы бүрек, .. ҡыҙыл кәзәки кейеп, билен ҡыҙыл билгау менән быуған Әләкәй ҡамсы менән һелтәнеп килә.* Т. Хәйбуллин.

**ҠЫРПЫУЛАУ** *к.* Ҡырпыу менән тирәсләү. *Бүректе ҡырпыулау. Тунды ҡырпыулау.*

**ҠЫРСАУ** *к. диал.* Ҡырсыу.

**ҠЫРСИҒӘ** *и.* Ҡалайҙан, баҡырҙан сигәләп эшләнгән бәләкәй ҡула ҡаҙан.

**ҠЫРСЫ** *и.* Ҡыр, баҫыу эшсеһе. *Ҡырсылар баҫыу мәрйенен центнер-центнер тоҡҡа тултырған.* Ә. Ихсан.

**ҠЫРСЫЙ** *и. диал.* Балыҡ тәңкәһе.

**ҠЫРСЫЛДАУ** *к. кар.* **ҡылсылдау.**

**ҠЫРСЫЛЫҠ** *и. кар.* **баҫыусылыҡ.** *Ҡырсылыҡ бригадаһы.*

**ҠЫРСЫН** *и.* **1.** Һыу буйындағы шымарып бөткән ваҡ таш. // *Ҡырсын юл.* ■ *Ике яҡ юлдың өҫтөнә ҡырсын түшәп сығаһы ҡала.* Б. Бикбай. *Тутыҡ тимер инде сөй булмаҫ; ҡырсын комо ҡабат таш булмаҫ.* В. Ишмурзин. *Ҡыҙыл ғына буйы ҡыҙыл ҡырсын, ҡыҙыл ҡырсын буйлап йүгерҙем* (Халыҡ йырынан).

**2.** Шул таштар менән ҡапланған урын. *Ҡырсын ташы.* ■ *Ҡырсында, комда хәлең бөткәнсә ҡыҙынаһың да йүгереп барып һыуға һикерәһең.* З. Биишева.

**ҠЫРСЫНЛЫҠ** *и.* Ҡырсынлы һыу сите. *Яр буйы һәр төрлө ағас, үлән, сәскә менән биҙәлгән. Һыу инеү өсөн ҡырсынлыҡ та бар.* Ф. Рәхимғолова.

**ҠЫРСЫНТАШ** *и.* Йышылып, шымарып бөткән ваҡ ҡаты таш. *Был һырт кварциттан, ҡырсынташтан тора.* Д. Бураҡаев.

**ҠЫРСЫНЫУ** *к.* Берәй эш ҡылырға ҡыҙыҡшыу. *Китергә ҡырсынып тороу.* ■ *Солтанғәле ҡапыл һикереп торҙо ла таш менән тегенең башына һуҡты. Уны туҡмарға ҡырсынып торған малайҙар ян-яҡҡа ҡасты.* Я. Хамматов.

**ҠЫРСЫУ** *к. диал.* Йәбешкән, йәбешеп ҡатҡан нәмәне ҡырыу. *Балыҡты ҡырсыу. Ҡырсып таҙартыу. Йәш бәрәңгене ҡырсып бешереү.*

**ҠЫРҪАУ** *с.* Тәбиғәтенән ялҡау, ығыш (малға ҡарата). *Ҡырҫау һыйыр.*

**ҠЫРТ** *окш.* **1.** Ҡаты, мурт нәмәне өҙә ҡырҡҡанда сыҡҡан тауышты белдергән һүҙ. *Ҡырт итеү. Ҡырт иттереү. Ҡырт иттереп тешләп өҙөү.*

**2.** *р. мәғ.* Ҡапыл, киҫкен хәрәкәт менән. *Ҡырт боролоу. Ҡырт туҡтау.*

**3.** *с. мәғ.* Эш, мөнәсәбәттә ҡәтғи, киҫкен. *Ҡырт кеше.* ■ *[Зәлифә:] Атайыңдың бик ҡырт ғәҙәте лә була торғайны.* С. Агиш.

**4.** *с. мәғ.* Өҙөп кенә, аныҡ ҡына итеп әйтелгән. *Ҡырт яуап.* // *Ҡырт ҡына әйтеү. Ҡырт ҡына яуап ҡайтарыу.* **Ҡырт киҫеү** *кар.* **киҫеү** 10.

◆ **Ҡырт һыныу** *диал.* сурт һыныу (*кар.* **сурт**).

**ҠЫРТАЛАШЫУ** *к. диал.* **1.** Маташыу. *Ҡайтырға һанаулы ғына көндәр ҡалһа ла, һаман һинән хат көтөп ҡырталашам.* Ш. Янбаев. *Бала--сағаһына тиклем тырма тотҡан булып, һалам ҡағып ҡырталаша.* Б. Бикбай.

**2.** Ҡыр талашыу (*кар.* **талашыу**).

**ҠЫРТ-ҠЫРТ, ҡырт та ҡырт** *окш.* **1.** Ҡабат-ҡабат ҡырт иткән тауышты белдергән һүҙ. *Ҡырт-ҡырт итеү. Ҡырт-ҡырт сәйнәү. Ҡырт-ҡырт килеү.* ■ *Угаса булмай, кола Ҡашкабыҙ кырт-кырт көйшәүенән капыл туктап калды.* С. Кулибай.

**2.** *р. мәғ.* Ҡапыл-ҡапыл булған киҫкен хәрәкәтте белдергән һүҙ. *Ҡырт-ҡырт баҫыу.*

**ҠЫРТЛАТЫУ** *к.* Ҡырт иттереү. *Тугай буйында аттар бышкырганы, кыртлатып үлән өҙгәне ишетелде.* Н. Мусин.

**ҠЫРТЛАУ** *к.* Ҡырт итеү. *Ҡалай каты еп, кырккан һайын кыртлап тора.*

**ҠЫРТ-МЫРТ** [1], **ҡырт та мырт** *окш. кар.* **ҡырт-ҡырт.** *Ҡырт-мырт сәйнәү.*

**ҠЫРТ-МЫРТ** [2], **ҡырт та мырт** *с. кар.* **ҡырыҫ-мырыҫ.** *Тау кешеләре кырт та мырт була.* С. Агиш.

**ҠЫРТЫЛДАТЫУ** *к.* Ҡырт-ҡырт иттереү, ҡырт-ҡырт килтереү. *Ҡыртылдатып сәйнәү.*

**ҠЫРТЫЛДАУ** *к.* Ҡырт-ҡырт итеү, ҡырт-ҡырт килеү. *Ҡыртылдап тороу.*

**ҠЫРТЫМ** *с.* Һүҙ менән әүрәтеп, халыҡты ҡуҙғытыусан. *Ҡыртым кеше.*

**ҠЫРТЫШ** [1] *и.* **1.** Һәр төрлө нәмәнең иң өҫкө йоҡа ҡатлауы. *Ер кыртышы. Икмәктең кыртышы. Әфлисун кабыгының кыртышы. Ҡыртышлы суска майы.* ■ *Экскаватор ярһып-ярһып, ер кыртышын кимерергә кереште.* Ф. Иҫәнғолов. *Ҡыртышы серегән бүрәнәнең үҙәге лә бик тиҙ сереүсән.* С. Ҡудаш.

**2.** *диал.* Сиҙәм. *Ҡыртыш бесәне. // Ҡыртыш ер.*

♦ **Ер ҡыртышын ашау** ер өҫтөндә булған бөтә тереклекте ҡармап алырҙай булып ҡомһоҙланыу. **Ҡыртыш ҡырҡтырыу** мал-тыуарҙы бәлә-ҡазанан һаҡлар өсөн доға уҡытыу.

**ҠЫРТЫШ** [2] *с. диал.* Ныҡымыш, кире. *Ул кыртыш, ауыҙына бер алһа, куймай торган.*

**ҠЫРТЫШЛАНЫУ** [1] *к.* Ҡыртышҡа, ҡатлауға әйләнеү. *Кукуруз сәселгән баҫыуҙы кыртышланыуҙан һакларга кәрәк.*

**ҠЫРТЫШЛАНЫУ** [2] *к. диал.* Ныҡымышланыу, киреләнеү. *Ҡыртышланмай гына эшлә инде әйткәс.*

**ҠЫРТЫШЛАУ** *к.* Өҫкө йоҡа ҡатлауын, ҡыртышын алыу; эрсеү. *Тәү башлап ырҙын асканда сиҙәмде кыртышлау.*

♦ **Ер ҡыртышлау** *кар.* **ер** 4.

**ҠЫРХ-ҠЫРХ** *окш. кар.* **ҡарҡ-ҡарҡ.** *Миңлебәҙәр һыуык тейҙереп, кырх-кырх йүткерә ине.* К. Туйкин.

**ҠЫРҺЫҒЫУ** (ҡырһыҡ*ғ*) *к.* Халыҡ ышаныуынса, ҡырһыҡ тәьҫиренә дусар булыу, ҡырһыҡҡа бирешеү. *Ҡаҙ бәпкәләре кырһыга шул, күҙ тейһә, үҫмәй, уңмай.* М. Ҡулаев.

**ҠЫРҺЫҠ** *и.* Халыҡ ышаныуынса, ҡарғыш, ҡаты күҙ, кейәнең ҡазалы тәьҫире. *Мал кырһыктан үлеп бөткән.*

**ҠЫРҺЫҠТЫРЫУ** *к.* Күҙ тейҙереп йәки башҡа сәбәптән уңышһыҙлыҡҡа дусар итеү. *[Ҡыҙҙар:] Олатай, һинең балыктарыңды кырһыктырмаһак, ошонан һыу алайык тигәйнек.* Һ. Дәүләтшина.

**ҠЫРШ** *окш.* Ҡамышты, үләнде һәм шундайыраҡ бүтән нәмәне өҙә ҡырҡҡанда сыҡҡан тауышты белдергән һүҙ. *Ҡырш иттереп кыркыу.*

**ҠЫРШАУ** *и. диал. кар.* **ҡоршау** 2.

**ҠЫРШ-ҠЫРШ, ҡырш та ҡырш** *окш.* Ҡабат-ҡабат ҡырш иткән тауышты белдергән һүҙ. *Ҡырш-кырш итеү. Ҡырш-кырш килеү.*

**ҠЫРШЛАТЫУ** *к.* Ҡырш иттереү, ҡырш-ҡырш килтереү.— *Иламаным .. кайсы менән кыршлатып колагымды кырккanda.* Ғ. Әмири.

**ҠЫРШЛАУ** *к.* Ҡырш итеү, ҡырш-ҡырш килеү. *Урман үләнен сапканда кыршлап тора.*

**ҠЫРШЫЛДАТЫУ** *к.* Ҡырш-ҡырш иттереү, ҡырш-ҡырш килтереү. *Ҡыршылдатып кыяр ашау.* ■ *Иркен болононда кайыра һелтәп, кыршылдатып бесән сапканмын.* А. Игебаев.

**ҠЫРШЫЛДАУ** *к.* Ҡырш-ҡырш итеү, ҡырш-ҡырш килеү.

**ҠЫРЫЙ** *и. диал. кар.* **ҡыр** [2] 1—3.

**ҠЫРЫЛЫУ** *к* **1.** *төш. кар.* **ҡырыу.** *Бер нисә сәгәт элек кенә [Әмирхановтың] һакалы кырылмаган ине.* С. Агиш. *Ярты гәскәр яуҙа йыгылган, кый үләндәй дошман кырылган.* М. Кәрим. *Йәш агастар кырылган булган. Ул [урмансы] йәһәт кенә шуларҙы ултыртып сыккан* (Әкиәттән).

**2.** Ышҡылып, өйкәлеп ашалыу. *Ҡамсат кына бүрек туҙмай, тиҙәр, кырылып ук ситенән туҙа икән* (Халыҡ йырынан).

**3.** *күсм.* Күпләп үлеү. *Астан кырылыу. Вабанан кырылыу.* ■ *Иген түгел, үлән дә үҫмәй. Мал кырыла, халыктың йәне кибә.* Ә. Вахитов. *Был ни гәжәп, берәм-берәм күгәрсендәр кырыла.* Ҡ. Даян. **Себен кеүек ҡырылыу** бик күпләп үлеү. *Ут эсендә йөрөйбөҙ, һис бер максатһыҙ себен кеүек кырылабыҙ.* Д. Юлтый.

**4.** *күсм.* Ныҡ йонсоу; ҡыйралыу. *Күп вакыттан йокламай юлда кырылып килгән Айтуган башы мендәргә тейеү менән йокога китте, ти* (Әкиәттән).

♦ **Күңел ҡырылыу** *кар.* **күңел. Кәйеф ҡырылыу** *кар.* **кәйеф. Ҡырҡ эш ҡырылып ятыу** эшләйһе ашығыс эш бик күп булыу. *Ҡырк эш кырылып ята, ә ул иркенләп тороп һөйләшеп ултырмак була.* **Эс ҡырылыу** *кар.* **эс.**

**ҠЫРЫЛЫШ** *и.* Халыҡтың күпләп үлеүе. *Ҡырылыш башланыу. Ҡырылыш китеү.* ■ *[Ғәйзулла:] Алтын өсөн үлеш-талаш, кырылыш харап булды! Тик йәштәр генә белмәй уны.* Я. Хамматов. *Мин унда [хатта] һугыш, кырылыш, уның дәһшәте тураһында, аслык тураһында яҙам.* Д. Юлтый.

**ҠЫРЫЛЫШЫУ** *к. урт. кар.* **ҡырылыу** 3. *Кем өсөн кырылыштылар, үлештеләр һуң яу яһап.* Т. Йәнәби.— *Эй, еңгә, .. ете малай бит, әйтеүе генә еңел. Һугышмаһалар ҙа ул тиклем булмаҫ ине. Сак күҙ яҙлыктырҙыңмы — кырылышып баралар.* Ш. Янбаев.

**ҠЫРЫН** *с.* **1.** Бер яҡҡа ауыш, иңкеү. *Ҡырын ер. // Ҡырын һалып куйыу.* ■ *Тау текә. Юл кырын. .. Төрлө хәл була.* З. Биишева. *Булат [көҙгөнө] өйгә индереп, түр стенага кырын һөйәп куйган.* Б. Бикбай. *Иҙеү асык. Ҡара бүркен һалып алган кырынырак.* М. Кәрим.

**2.** Тура йүнәлештән тайпылышлы, бер яҡҡа ҡыйыш; ҡыя. *Ҡырын сәс. // Ҡырын ултырыу.*

*Тәмәкене ҡырын тешләү.* ■ *Ҡуҙы яурын, ҡорос башаҡ, бәлдәгәндә тайшанып, ҡырын китһәң, һиңә хурлыҡ* (Ҡобайырҙан).

**3.** Төп йүнәлештән, оло юлдан тайпылышлы; сит. *Ауыл ҡырын яҡта, тауҙар, урмандар араһында ята.*

**4.** *күсм.* Дөрөҫ йүнәлештән, тейешле тәртиптән тайпылышлы; яраҡһыҙ, насар. *Ҡырын һүҙ.* // *Ҡырын эшләү.* ■ *[Фәтхиә — Һәжәргә:] Ғүмереӊ буйы ҡырын йәшәгәнһеӊ, улыӊдыӊ башын да шунда ҡайыраһыӊ.* Ш. Янбаев. *Тура ҡарап, ҡырын һөйләр замандар уҙған инде.* Б. Бикбай.

**5.** *күсм.* Кәрәкле яйға, тейешле ыңғайға килешһеҙ; кире. *Ҡырын кеше.* ■ *Донъя Зәйнәпкә гел ҡырын килеп, бер ҙә асыҡ йөҙ күрһәтмәгәс, уның күңеле ҡайҙа булһа ла риза булырға ғына тора ине.* М. Ғафури.

♦ **Ҡырынға һаплау** *шул уҡ* **кирегә һаплау** (*ҡар.* **кире** [1]). *[Хөсәйен:] Һеҙ, бисәләр, инде ҡырынға һаплауҙы кешенән һорамайһығыҙ.* Һ. Дәүләтшина. **Ҡырын иҙеү** *диал.* тиҫкәре холоҡло кеше. **Ҡырын ҡағыу** ситкә ҡағыу. *Еңел кәсепте ул ауылдың муллалары ла ҡырын ҡаҡмаған.* Б. Бикбай. **Ҡырын ҡарау** *шул уҡ* **ҡырын күҙ менән ҡарау** (*ҡар.* **күҙ**). *Өфөлә күрһәң, [ҡоҙалар] сәләм дә бирмәй, ҡырын ҡарап ҡына уҙа.* Ш. Насыров. **Ҡырын тейәү** эсеп алыу. *Аҙ ғына ҡырын тейәгән мәзин ишек асырға үҙе сыҡты.* Р. Ғабдрахманов. **Ҡырын һуғыу** ҡамасаулыҡ итеү, ҡамасаулау. *Колхозда һөт ташыған махсус автомашинаның булмауы малсыларҙың эшенә ҡырын һуға.* «Совет Башҡортостаны», 1971, 25 июнь. **Ҡырын ятыу** 1) терһәккә таянып, бер яҡ ҡабырғаға ятыу. *Ҡырын төшөп ятыу.* ■ *[Нәркәс — Һәүбәнгә:] Атам тороп киткәндә ҡырын ятып ҡалырһың.* «Аҡбуҙат»; 2) эшһеҙ, буш ятыу.

● *Ҡырын ятҡан — ашһыҙ ҡалыр, эшләгән — көрәп алыр.* Әйтем.

**ҠЫРЫНАЙТЫУ** *к.* Ҡырын (1, 2 мәғ.) хәлгә килтереү. *Башты ҡырынайтыу.*

**ҠЫРЫНАЙЫУ** *к.* Ҡырын (1, 2 мәғ.) хәлгә килеү. *Баланың башы бер яҡҡараҡ ҡырынайа төштө. Сәғиҙә: «Балам, Булат, һыу эсәһеңме?» — тип битенән һыйпаны, башын турайтып ҡараны.* М. Тажи. *Һонтор, уңайлап ултырырға теләгәндәй, ҡырынайып сүгәләне һәм шунда уҡ лап итеп ергә ҡоланы.* Ә. Бикчәнтәев.

**ҠЫРЫНҒЫС** *и.* Һаҡал, мыйыҡ ҡыра торған ҡорал. *Электр ҡырынғысы.*

**ҠЫРЫНДЫ** *и.* Ҡырып йыйғанда сыҡҡан ҡалдыҡ. *Он ҡырындыһы.*

**ҠЫРЫНДЫҠ: ҡырындыҡҡа һаплау** *диал. шул уҡ* **кирегә һаплау** (*ҡар.* **кире** [1]).

**ҠЫРЫНЛАТЫУ** *к.* **1.** Ҡырын яҡҡа йүнәлтеү. *Ҡырынлатып китеү.*

**2.** *ҡар.* **ситләтеү.** *Ҡырынлатып әйтеү.*

**ҠЫРЫНЛАУ** *к.* **1.** Ҡырын, ҡыя йүнәлеш алыу. *Ҡырынлап сабып китеү. [Мәскәй — Ҡуҙыйкүрпәскә:] Был кешеләр һинең ырыуҙарыңды сағып, уларҙың мейеһендә төҙәлмәҫ ағыуҙарын ҡалдырырға ҡырынлап килгән йылан һымаҡтар.* «Ҡуҙыйкүрпәс менән Маянһылыу».

**2.** *күсм.* Үсегеп, үпкәләп киреләнеү. *Артист халҡы ғәсаби була. Әҙ генә нәмәгә лә ҡырынлап, талашып, һүгешеп, уның ахыры йоҙроҡлашыуға .. барып етә.* Д. Юлтый.

**ҠЫРЫН-МЫРЫН** *р.* **1.** Тегеләй-былай ҡыйыш. *Ҡарт ҡырын-мырын баҫып, йырлай-йырлай сығып китте.* М. Тажи.

**2.** *күсм.* Боҙоҡ төҫ менән; кирле-мирле. *Ҡырын-мырын һөйләшеү.* ■ *[Ямалов:] Ошо ғүмер буйына бергә йәшәп килдек, әммә, мин әйтәм, бер кемде рәнйетмәнем, кешеләргә ҡырын-мырын торған сағым булманы.* Н. Ғәлимов.

**ҠЫРЫНЫУ** *к.* Һаҡал, мыйыҡты ҡырыу. *Ул [агроном] әле генә ҡырынған булырға тейеш: бите сафсаф, одеколон еҫе аңҡып тора.* Ә. Вәли.

**ҠЫРЫН-ЯРЫН** *р.* **1.** Тегеләй-былай ҡырынайып, ҡырын-мырын итеп. *Ҡырын-ярын баҫып килеү.* ■ *[Ғөбәйҙулла] бисәһенең йылҡылдап торған атлас күлдәгенә ҡырын-ярын күҙ һалып алған булды.* Р. Солтангәрәев.

**2.** *күсм.* Тейешле тәртип, йүнәлешкә яраҡһыҙ рәүештә; яҙа. *[Бохайыр:] Салауат ул — ярһыу йөрәк егет, әгәр ҡырын-ярын аяҡ баҫһа, ҡылырмын ҡылыҡты.* Б. Бикбай.

♦ **Ҡырын-ярын ҡарау** *шул уҡ* **ҡырын күҙ менән ҡарау** (*ҡар.* **күҙ**).

**ҠЫРЫП-ВАТЫП** *р. ҡар.* **ҡырып-емереп.**

**ҠЫРЫП-ЕМЕРЕП** *р.* Тотош рәттән ҡыйратып. *Аҡҡөлән .. юлындағы ҡаршылыҡтарҙы ҡырып-емереп, ҡотороп таша.* Б. Бикбай.

**ҠЫРЫП-СЫРЫП** *р.* Бөтә булғанынса, тотош. *[Наҡышев:] Барлы-юҡлы аҡсамды ҡырып-сырып урыҫҡа түләнем.* Я. Хамматов.

**ҠЫРЫП-ҺЕПЕРЕП** *р.* Бер нәмә ҡалдырмайынса, барыһын да. *Айыу ағас башына менеп, умартаның балын ҡырып-һеперең ашап китә.* Ж. Кейекбаев. *Ауылдарҙа аҙыҡ табып булмай, алдан үткән ғәскәрҙәр ҡырып-һепереп киткән була.* Д. Юлтый.

**ҠЫРЫҪ** *с.* **1.** Кешегә булған мөнәсәбәттә ҡаты, ҡырҡыу. *Ҡырыҫ тәбиғәтле. Ҡырыҫ холоҡло. Ҡырыҫ булыу.* ■ *Емеш үҙенең ҡырыҫ ҡылығы арҡаһында бында йүнләп эйәләшергә лә, кеше менән аралашырға ла өлгөрмәй ҡалды.* З. Биишева.

**2.** Ҡулға эйәләшеп бөтмәгән; ҡырағай. *Ҡырыҫ холоҡло.* ■ *Ете йәше еткәндә, ниндәй ҡырыҫ атты ла ҡурҡмай менеп сапҡан ул [Салауат].* «Юлай менән Салауат».

**3.** Көнкүреш өсөн ҡыйын, йәшәү өсөн ауыр, уңайһыҙ. *Ҡырыҫ тәбиғәт.* ■ *Беҙҙең яҡ ҡырыҫ, ашлыҡ һуң өлгөрә.* Р. Низамов.

**ҠЫРЫҪАЙЫУ** *к. ҡар.* **ҡырыҫланыу.** *Итәгәтле, миһырбанлы инең, ҡапыл ҡырыҫайҙың ниңәләр.* А. Игебаев.

**ҠЫРЫҪЛАНЫУ** *к.* **1.** Ҡатҡыл, ҡырҡыу мөнәсәбәтлегә эйләнеү; ҡырыҫ булыу. *[Рәхимә:] Үҙебеҙгә ил булып, ҡырыҫланмай, баш һалып килһә, ағаһы ла ситкә ҡаҡмаҫ.* Һ. Дәүләтшина.

**2.** Ҡырағай, ҡырыҫҡа әйләнеү; ҡырыҫ булыу. *Теләһә ҡайҙа йөрөп, ҡырыҫланып бөткән һыйыр-һарыҡ ҡураға ҡайтарылды.* Ф. Иҫәнғолов.

**3.** Ауыр шартлыға әйләнеү; ҡырыҫ булыу. *[Йәй урталарына] тормош әллә нисек ҡырыҫланған, йәмһеҙләнгән төҫлө тойола.* Й. Солтанов. *Көн ҡыҫҡа һарҡып, төньяҡтан иҫкән һалҡынса ел менән ҡырыҫланып китте.* З. Биишева.

**ҠЫРЫҪЛЫҠ** *и.* **1.** Ҡырыҫ, ҡаты холоҡ.— *Илләә башлы кешеһең дә үҙең, Гәрәй ағай! Кил әле, шуның өсөн бер үбәйем!..— Шәүәли, кисә кис менән кисергән ҡырыҫлығын онотоп, ҡунағының биттәрен ялай башланы.* Б. Бикбай. *Хәрби тормошта ҡырыҫлыҡ та кәрәк, ләкин ни өсөн кешенән гражданкалағы эшен онотоуҙы талап итергә?* Н. Мусин.

**2.** Ауыр, ҡаты шарт. *Тәбиғәт шарттарының ҡырыҫлығына ҡарамаҫтан, баҫыу батырҙары күп көс түгеп үҫтергән игенде тиҙерәк, юғалтыуһыҙ йыйып алыу өсөн бөтә тырышлыҡтарын бирә.* «Совет Башҡортостаны», 1986, 16 сентябрь.

**ҠЫРЫҪ-МЫРЫҪ** *с.*, **ҡырыҫ та мырыҫ** Кеше менән мөғәмәләһе ыңғай булмаған, ҡырыҫ тәбиғәтле, киҫкен холоҡло; кирле-мирле. *Ҡырыҫ-мырыҫ кеше. // Ҡырыҫ-мырыҫ һөйләшеү.* ■ *Бик насар кәйеф менән ҡайтып инәм. Фәткиәнең һүҙенә лә ярты-йорто яуап биреп, ҡырыҫ-мырыҫ йөрөйөм.* Ф. Иҫәнғолов.

**ҠЫРЫУ** *к.* **1.** Үткер нәмәнең йөҙө менән ышҡып, ниҙеңдер өҫкө ҡатлауын алыу. *Иҙән һап-һары итеп ҡасар менән ҡырып йыуылған.* Я. Хамматов. *Бригадир поршень ҡуласаларын үҙе ҡыра башланы.* Ә. Вәли. / Тешле йәки үткер ҡорал менән ышҡып ваҡлау. *Алма ҡырыу. Кишер ҡырыу. Ҡорот ҡырыу.* / Өйкәп, тызып ашау. *Күсәрҙе тәгәрмәс тимере ҡырған.*

**2.** Үткер йәки ҡырлы нәмә менән ышҡып-ышҡып таҙартыу. *Бригадир һырты менән ҡағылған һыныҡ урaҡҡа табандарын тырышып ҡырҙы, өҫ-башын ҡаҡты.* Б. Бикбай. *Яҙыуҙы ҡырып торғанда ғына следователь барып ингән.* С. Агиш. / Һауыт төбөндәге нәмәне ҡырсып, һепереп йыйыу. *Әрйәне ҡырыу.*

**3.** Үткер бәке менән сәс, һаҡалды алыу. *Мыйыҡты ҡырыу. Сәсте ҡырыу.* ■ *Килдебай .. һаҡалын эйәк аҫтында ғына ҡалдырып ҡырған.* Ғ. Дәүләтшин.

**4.** *күсм.* Ватып емереп, юҡ итеү; ҡыйратыу. *Донъяны ҡырыу. Һауыт-һабаны ҡырыу.*

**5.** *күсм.* Күпләп үлтереп, юҡ итеү. *Дошман яуын ҡырыу. Малды ҡырыу. Ҡырып һалыу.* ■ *Элек сәсәк ауырыуы кешене салғы менән сапҡан кеүек ҡыра торған булған.* Ш. Янбаев.

**6.** *диал. ҡар.* **өйкәү** 2.

◆ **Йөрәкте ҡырыу** *шул уҡ* **күңелде ҡырыу** (*ҡар.* **күңел**). **Күҙгә ҡырып һалырлыҡ** *ҡар.* **күҙ. Кәйефте ҡырыу** кәйефте боҙоу, кәйефте алыу. *Рәхмәйҙең был һүҙҙәре Фәйзуллаға ныҡ ҡына кәйефен ҡырҙы булһа кәрәк.* Ғ. Ғүмәр. **Ҡыра һуғыу 1)** пыран-заран итеү, пыр туҙҙырыу. *Ҡыра һуғып, ташлап сығып китеү. Ҡыра һуғып, эшләп ташлау;* 2) үлтереп, ҡырып, юҡ итеү. *Ваба ярты ауылды ҡыра һуғып һалды.* М. Тажи. **Ҡырып түгеү** *шул уҡ* **һепереп түгеү** (*ҡар.* **һепереү**). *[Фәхри:] Их, был Мәҡсүт муллаларын, береһен ҡалдырмай ҡырып түгергә ине.* Б. Бикбай. **Тамаҡ ҡырыу** *ҡар.* **тамаҡ. Эсте ҡырыу** *ҡар.* **эс. Эш ҡырыу** *ҡар.* **эш.** *Мин, тәүфикһыҙ, төкөрөп ауылға, эш ҡырырға киттем калаға.* Ғ. Амантай.

● *Тик тормаған эш ҡырыр, тик ултырған ҡотолор.* Әйтем.

**ҠЫРЫШЫУ** *к.* **1.** *урт. ярҙамл. ҡар.* **ҡырыу** 1—5.

**2.** *күсм.* Буйһондорорға, тыйырға тырышып, еңешеү. *[Урман батыр:] Ана теге ат һуйҙырмай тулап китте, шуның менән ҡырышып йөрөгәндә, аңламаҫтан бысаҡ ҡаҙалды* (Әкиәттән).

● *Эшкә тиһәң — ҡырыша, телгә тиһәң — ярыша.* Әйтем.

**ҠЫСҠЫРТҠЫС** *и.* Машинаның ҡысҡыртып тауыш бирә торған ҡулайламаһы. *Ҡысҡыртҡыска баҫыу.*

**ҠЫСҠЫРТТЫРЫУ** *к. йөкм. ҡар.* **ҡысҡыртыу** 1.

**ҠЫСҠЫРТЫУ** *к.* **1.** *йөкм. ҡар.* **ҡысҡырыу** 1. *Баланы ҡысҡыртыу.*

**2.** Тауыш бирҙереү; тауышландырыу. *Борғо ҡысҡыртыу.* ■ *Күршем өйҙә емерерҙәй итеп, радиолаһын ҡысҡыртырға тотона.* Р. Солтангәрәев.

**ҠЫСҠЫРЫҠЛАУ** *к.* Ҡабат-ҡабат ҡысҡырыу. *[Малай] ҡысҡырыҡлап, ағас атын ҡамсылап, урамға сығып йүгерҙе.* Һ. Дәүләтшина.

**ҠЫСҠЫРЫНЫУ** *к.* Үҙ алдыңа йәки кешегә асыуланып ҡысҡырыу; екеренеү, аҡырыныу. *Бай күпме генә ҡысҡырынмаһын, .. тауышын ишеткән кеше лә булманы, ти* (Әкиәттән).

**ҠЫСҠЫРЫУ** *к.* **1.** Көслө тауыш сығарыу. *Асыуланып ҡысҡырыу. Ҡысҡырып йырлау. Ҡысҡырып көлөү. Ҡысҡырып өндәшеү. Ҡысҡырып уҡыу.* ■ *Радио беҙҙең бүлмәлә ҡысҡырып һөйләп тора. Йә Мәскәүҙән, йә Өфөнән музыка гөрләп тора.* Р. Ниғмәти.

**2.** Тауыш биреү. *Ҡайҙалыр оҙон итеп пароход ҡысҡырҙы.* Ә. Бикчәнтәев. *Өсөнсө әтәс ҡысҡырғанда илһыулыҡ бөтә күк көмбәҙенә таралды.* З. Хисмәтуллин.

**ҠЫСҠЫРЫШ** *и.* Шау-шыу, оло тауыш. *Бер нисә сәғәттән атлы ҡаҙаҡтар, урядниктар килеп баҫты. Ауылда ғауға ҡупты. Сыр-сыу, ҡысҡырыш.* Т. Хәйбуллин.

● *Өйҙәш тә бер, көндәш тә бер: ҡысҡырыш та талаш.* Әйтем.

**ҠЫСҠЫРЫШЫУ** *к.* **1.** *урт. ҡар.* **ҡысҡырыу.** *Ҡысҡырышҡан тауыш.* ■ *Ике-өс әтәс бер-бер артлы ҡысҡырышты ла тағы тынды.* Я. Хамматов.

**2.** Үҙ-ара һүҙгә килешеү, ҡысҡырып әрләшеү. *Улар [кешеләр] сход өйөнә тулды. Ҡайһылары йылы мейескә арҡа терәне. Уларҙың хәҙер ҡысҡырыша торған эштәре лә юҡ.* Һ. Дәүләтшина.

**ҠЫСМА-КҮС** *и. диал. ҡар.* **ҡамҡа** [2].

**ҠЫСМАУ** *и.* Ҡунысты үрҙән ҡыҫып бәйләп ҡуя торған суҡлы бау; ҡунысбау. *Ҡыныйраҡ ҡысмауы. Сарыҡ ҡысмауы.*

**ҠЫСУР** [*ғәр.*] *и. иҫк. кит.* Кәмселек, етешһеҙлек. *Һәр кемдең был донъяла һүрәте бер, бер-береһенә ҡарағанда юҡ ҡысуры.* М. Ғафури.

**ҠЫСЫНДЫРЫУ** *к. эйһ. ф. ҡар.* **ҡысыныу** 1. *[Мәскәй әбей:] Ҡыҙым, бик ҡысындыра ла башланы, мунса яғырға кәрәк ине* (Әкиәттән).

**ҠЫСЫНМА** *и.* Тәндә ҡысыттырып, сабыртып сыҡҡан йоғошло тире ауырыуы. *Ҡысын-*

маны бик ваҡ, тик лупа йәки микроскоп аша ғына күреп була торған бетсә булдыра. В. Ғүмәров.

**ҠЫСЫНЫУ** *к.* **1.** Төрлө ерҙән тән ҡысып, тырнаныу.

**2.** *күсм.* Ниҙер эшләргә ҡыҙышыу; ҡырсыныу. *Гөлъямалдың бейеүенән файҙаланып, бисәләр үҙ-ара уның ғәйбәтен һатты: — Нимәһенә ҡысынып йөрөй инде?* Я. Хамматов.

● *Телгә килһә — осонған, эшкә килһә — ҡысынған.* Әйтем.

**ҠЫСЫНЫШЫУ** *к. урт. кар.* **ҡысыныу.**

**ҠЫСЫТМА** *и. диал.* Ҡысынма.

**ҠЫСЫТТЫРЫУ** *к. көс. кар.* **ҡысытыу.** *Йөн ойоҡ аяҡты ҡысыттыра.*

**ҠЫСЫТЫУ** *к. кар.* **ҡысыу** [1]. *Арҡа ҡысыта. Баш ҡысыта.*

**ҠЫСЫУ** [1] *к.* **1.** Тәндә нимәлер йөрөгән һымаҡ булыу; ҡымырйыу. *Баш ҡысый. Табан ҡысый. Танау ҡысый. Ус ҡысый. Ҡысыған ер.* ■ *Күптән килгән ғәҙәт буйынса, тәне ҡысып интеккән кеше йылға буйында сокор ҡаҙып, ут яғып, ҡыҙған ком өҫтөнә аҡһырғаҡ түшәп, .. күмелеп ята. Шунан тәндең ҡысыуы ла ҡана, һыуыҡ тейгән кешегә шифа ла була.* Я. Хамматов.

**2.** *күсм.* Тик тороп сыҙамай ҡыҙышыу. *Һөйләргә тел ҡысый. Эшләргә ҡул ҡысый.* ■ *Малайҙың әсәһенә ниҙер әйтергә теле ҡысып тора ине.* Ф. Исәнғолов.

◆ **Ҡайһы ерең ҡысый** ниндәйҙер ауыр хәлдә ҡалғанда көлөп әйтелә. *Бал ҡорттары айыуҙың еҫен тойоп, аяуһыҙ сағырға тотона. Ҡайһы ерең генә ҡысый!* (Әкиәттән).

● *Һөйгән ерҙән күҙ китмәҫ, ҡысыған ерҙән ҡул китмәҫ.* Әйтем.

**ҠЫСЫУ** [2] *и.* Ҡутырлап, һап-һары булып сейләнеп сыҡҡан тире ауырыуы. *Шунан әбей әнәне мүктән алып, һелкеп-һелкеп ҡуя. Әнә үҙе быҫраҡ, үҙе ҡысыулы ла ҡутырлы бер кешегә әйләнә* (Әкиәттән).

**ҠЫСЫУЛАТЫУ** *к.* Ҡысыу [2] менән ҡаплатыу, ҡысыуға сығырға ирек ҡуйыу. *Баланы ҡысыулатыу.*

**ҠЫСЫУЛАУ** *к.* Ҡысыу [2] менән ҡапланыу, ҡысыу сығыу. *Башы ҡысыулаған. Ҡулы ҡысыулаған.* ■ *Мал араһында берәүһе ҡысыулаһа, башҡаларына ла йоға.* М. Ғөбәйҙуллин.

**ҠЫҪА** *и.* **1.** Ниҙе лә булһа ҡыҫып бәйләй торған ике таяҡ йәки ярыҡ сыра. / Ҡыҫтырып тоттора торған ике йәпле ҡорал. *Тимерҙе ҡыҫаға ҡуйып игәү.*

**2.** Ҡуша уратып тота торған тимер. *Арба күкрәгеп арт күсәргә ҡыҫа менән ныҡытыу.*

**3.** *диал. кар.* **ҡыҫан** [1].

**ҠЫҪАЛ** *и.* Эсәк, ҡарында була торған аҡ селәүсен.

**ҠЫҪАЛА** *и.* **1.** Йоҡа ҡабырсаҡ менән ҡапланған оҙон быуынтыҡ кәүҙәле, йөҙгөс ҡойроҡло, ике ҡыҫҡыс аяҡлы сөсө һыу йәнлеге.

**2.** (*баш хәреф менән*) *астр.* Зодиактың береһе (Игеҙәктәр һәм Арыҫлан йондоҙлоҡтары уртаһында урынлашҡан).

● *Бер ҡыҫала бөтә күлде болғар.* Мәҡәл.

**ҠЫҪАЛАН** *и.* Ике бейек тау араһы; ҡыҫыҡ. // *Ҡыҫалан юл. [Таңдыса] бейек-бейек, урлекырлы ятҡан тау ҡыҫаландары буйлап йөрөй торғас, ян-яғы ҡамаулы тигеҙ урынға барып сыға.* «Ҡуңыр боға».

**ҠЫҪАН** [1] *и.* Эсенә ни ҙә булһа ҡуйыр өсөн хеҙмәт иткән тирәс. *Тәҙрә ҡыҫаны.* ■ *Ике тәҙрә араһындағы стенала, өҫтәл тапҡырында, ҡара ҡыҫандар эсендә бер нисә фотокарточка тора.* Б. Бикбай.

**ҠЫҪАН** [2] *с. диал.* Ҡыҫынҡы.

**ҠЫҪАНЪЯ** *и. диал.* Ҡыҫмаҡ. *Шул баланды ҡыҫанъяға ал бер аҙ, юҡһа бик шаша башланы.* Б. Бикбай.

**ҠЫҪАНЫС** *с. диал.* Ҡыҫынҡы. *Акса яғы ҡыҫаныс булыу.*

**ҠЫҪҠА** *с.* **1.** Оҙонлоғо бер саманан кәм; киреһе оҙон. *Ҡыҫҡа аҙым. Ҡыҫҡа кейем. Ҡыҫҡа таяҡ. Күлдәкте ҡыҫҡа итеп тегеү.* ■ *Ҡыҫҡа ҡойроҡ, шеш ҡолаҡ ҡуяны күп Урал тау* (Ҡобайырҙан). / Буйы, бейеклеге урта саманан түбән; бәләкәй. *Буйға ҡыҫҡа. Ҡыҫҡа буйлы. Ҡыҫҡа үлән.* ■ *Ул [Йәнтимер] йыуан бер ҡатын менән ҡыҫҡа бер ир араһына ултырған.* С. Агиш.

**2.** Ваҡыт араһы бәләкәй; дауамһыҙ. *Ҡыҫҡа ваҡыт. Ҡыҫҡа ғүмер. Ҡыҫҡа төн.* ■ *Зыя менән тормош ҡороп торған йылдар ҙа Сәғиҙәгә бик ҡыҫҡа булып тойолдо.* М. Тажи. *Көҙгө ҡыҫҡа көн ҡискә һарыҡты.* З. Биишева.

**3.** Йөкмәткеһе, эстәлеге ҙур булмаған, бәләкәй күләмле. *Ҡыҫҡа бойороҡ. Ҡыҫҡа мәҡәлә. Ҡыҫҡа телмәр. Ҡыҫҡа хат. Ҡыҫҡа һөйләм. Ҡыҫҡа итеп әйтеү.* // *Ҡыҫҡа һөйләү. Ҡыҫҡа яҙыу.* ■ *Башланы һөйләргә Иблис ҡиссаһын, баштан уҙған ҡиссаһының ҡыҫҡаһын.* Ш. Бабич. *Моталлап үҙе бейеүселәргә ҡыҫҡа-ҡыҫҡа ғына итеп кәңәштәр биреп ултырҙы.* Ф. Исәнғолов.

◆ **Ҡулы ҡыҫҡа** *кар.* **ҡул** [1]. **Ҡыҫҡа тотоу** 1) оҙаҡҡа һуҙмай, тиҙләтеү. *Оҙаҡ һөйләшеп ултырырға ярамай, ҡыҫҡа тоторға кәрәк.* Ғ. Дәүләтшин; 2) иркенлек бирмәй, ҡаты тотоу. *Атаһы уны ҡыҫҡа тотто: уйынға-маҙар сығарыу, кейем менән маһайтыу юҡ, гел эш тә эш.* Б. Бикбай. **Ҡыҫҡа һуғыу** *шул уҡ* **ҡырт киҫеү** (*кар.* **киҫеү** 10).

● *Ҡыҫҡа еп көрмәүгә килмәй.* Әйтем. *Юртҡан атҡа юл ҡыҫҡа.* Әйтем.

**ҠЫҪҠАҠ** *с. диал.* Ҡыҫҡа.

**ҠЫҪҠАРТМА** *и.* **1.** Китап, яҙманың өлөш-өлөш ҡыҫҡартылышы. *Ҡыҫҡартма яһау.*

**2.** Ҡыҫҡартып яҙылған һүҙ (мәҫ. га, км).

**ҠЫҪҠАРТЫЛЫУ** *к. төш. кар.* **ҡыҫҡартыу.** *Ҡыҫҡартылған әҫәр. Ҡыҫҡартылған кейем. Ҡыҫҡартылған эш көнө.*

**ҠЫҪҠАРТЫУ** *к.* **1.** Ниҙеңдер буй үлсәмен кәметеү; ҡыҫҡа итеү. *Арҡанды ҡыҫҡартыу. Аҙымды ҡыҫҡартыу.* ■ *[Иванов:] Бөгөн мин уның шинелен матурлап, ҡыҫҡартып, таман итеп кенә тегеп бирәм.* Д. Юлтый. *Ул һинең юлды ҡыҫҡарта яңғыҙ башҡа яҡын дуҫ булып.* Ғ. Сәләм.

**2.** Ваҡыт араһын кәметеү. *Эш мөддәтен ҡыҫҡартыу.* ■ *[Өйрәнсек:] Юҡ өсөн баш ватып, ғүмер ҡыҫҡартырға мин алйотмо ни?* З. Биишева.

**3.** Ниҙеңдер күләмен, һанын кәметеү. *Докладты ҡыҫҡартыу. Мәҡәләне ҡыҫҡартыу. Сәсеүлек ерен ҡыҫҡартыу. Эш хаҡын ҡыҫҡартыу.*

4. *һөйл.* Штат кәмеү сәбәпле эштән сығарыу. *Председатель эште клуб мөдирҙәрен ҡыҫҡартыуҙан башланы.* Я. Вәлиев.

5. *мат.* Математик мөнәсәбәттең ике өлөшөн дә берәй һанға бүлеп, аҙ һандарҙа сағылдырыу. *Кәсерҙе ҡыҫҡартыу.*

◆ **Аяғын ҡыҫҡартыу** кемделер ярамаған, тейешһеҙгә йөрөүҙән тыйыу.— *Ишетһен колағың! — тине Байков [Игорға].— Был тирәлә тағы сыуалып йөрөйһө булһаң, аяғыңды ҡыҫҡартырбыҙ.* Ғ. Ибраһимов. **Ҡулын ҡыҫҡартыу** кемдеңдер бер яҡлап эшмәкәрлеген киҫеү, тыйыу. *Үсләшмәне Зәйтүнә, шулай ҙа Әйүповтың мутлыҡтарын күрмәй үтергә теләмәне, .. уның берәй шомлоғон һиҙеп ҡалһа, шунда уҡ кәрәген әйтеп, Минулланың ҡулын ҡыҫҡарта торҙо.* Ғ. Ибраһимов. **Телен ҡыҫҡартыу** кемделер әҙ һөйләргә йәки әрепләшмәҫкә мәжбүр итеү. *[Көҫәпкол:] Сағанбайҙың теле артыҡ оҙон, ҡыҫҡартырға кәрәк, ҡыҫҡартырға!* К. Даян.

**ҠЫҪҠАРЫУ** *ҡ.* **1.** Буй, ара үлсәме кәмеү, ҡыҫҡа хәлгә килеү. *Бау өҙөлөп, ҡыҫҡарған. Юл ҡыҫҡара.* ■ *Аяҡтар тала, аҙымдар ҡыҫҡара башланы.* Н. Мусин.

**2.** Ваҡыт араһы кәмеү. *Көн ҡыҫҡарҙы.*

**3.** *һөйл.* Ниҙендер күләме, һаны кәмеү. *Эш хаҡы ҡыҫҡарҙы. Штат ҡыҫҡарҙы.*

**4.** *мат.* Математик мөнәсәбәттең ике өлөшө лә берәй һанға бүлгәндән һуң аҙ һандарҙа сағылыу. *Кәсер ҡыҫҡарыу.*

◆ **Аяғы ҡыҫҡарыу** кемдер ярамаған, тейешһеҙгә йөрөүҙән тыйылыу. **Ҡулы ҡыҫҡарыу** кемдеңдер бер яҡлап эшмәкәрлегә тыйылыу. **Теле ҡыҫҡарыу** кемдер әҙ һөйләргә йәки әрепләшмәҫкә мәжбүр булыу. *Эшкә килеп бәйләндеме — уның теле ҡыҫҡарыр.* Ш. Насыров.

● *Ағас ҡырҡһаң, оҙон ҡырҡ: ҡырҡа ҡырҡа ҡыҫҡарыр.* Әйтем. *Мин өйләнгәс, төн ҡыҫҡарҙы.* Әйтем.

**ҠЫҪҠАСА** *р.* Оҙаҡҡа һуҙмай, ҡыҫҡа итеп; ҡыҫҡа рәүештә. *Ҡыҫҡаса аңлатыу. Ҡыҫҡаса кәбатлау.* ■ *Механик үҙенең уйын ҡыҫҡаса ғына һөйләп бирҙе.* Б. Бикбай.

◆ **Ҡыҫҡаса әйткәндә** *инш.* берәй эш-хәлдең асылын ҡыҫҡа итеп әйтергә теләгәнде белдерә.

**ҠЫҪҠАҺЫ** *инш.* Берәй эш-хәлдең асылын ҡыҫҡа итеп әйтергә теләгәнде белдерә. *Ҡайғымды ла, шатлығымды ла кешеләр менән уртаҡлашам: Ҡыҫҡаһы, эсемдәге — тышымда.* Р. Низамов.

**ҠЫҪҠЫС** *и.* **1.** Ҡыҫып тота, ҡыҫып ала торған һәр төрлө ҡорал. *[Рәфиҡ ағай] ҡыҫҡыс менән ҡыҫтырып, ут шыкелле ҡыҙҙырылған йыуан тимерҙе һандалға ҡуйған да әйләндерә-әйләндерә Әхмиҙән сүкетә.* Ш. Шәһәр.

**2.** Ҡуҙ, торомбаш тота торған ике йәпле ҡорал; йәмкә. *Усаҡтан әре-әре ҡуҙҙар алып самауырға һалып торған Емештең ҡулынан ҡыҫҡысы төшөп китте.* З. Биишева.

**ҠЫҪЛА** *и. диал.* Ҡыҫала.

**ҠЫҪЛАМ** *и.*, **ҡыҫлам ер** Сиҙәм асып, бер генә ҡат сәселгән ер. *[Афзал:] Нимә, былтыр асҡан сиҙәмде кукуруз сәсеп, әрәм итәбеҙме? Беләһеңме, ҡыҫлам ер бит ул. Беҙҙең башҡорт борон-борондан, ҡыҙымды бирһәм дә ҡыҫламды бирмәйем, тигән.* Ғ. Ибраһимов. **Ҡыҫлам арты** сиҙәм асып, икенсе мәртәбәгә сәселгән ер.

**ҠЫҪЛАНДЫ** *и. диал. ҡар.* **ҡыҫыҡ** [2] **1.**

**ҠЫҪМА** [1] *и.* **1.** Көлтә һөйәп киптерә торған кәртә.

**2.** Бесән күтәреп ташыу өсөн арҡыс-торҡос үрелгән бау.

**ҠЫҪМА** [2] *и. ҡар.* **ҡыҫмаҡ.**

**ҠЫҪМА** [3] *с.* Ҡыҫып, бәйләп һалынған. *Ҡыҫма һал.*

**ҠЫҪМАҠ** *и.* Ниндәйҙер талап, дәғүә йәки көс, яу менән ирекһеҙләп ҡыҫыу хәле.— *Йә, тиҙ, тамаҡҡа йүнәтегеҙ,— тип Этҡол бай бәләкәй бисәһе Зәлифәне ҡыҫмаҡҡа алды.* Т. Хәйбуллин.

**ҠЫҪМАҠЛАУ** *ҡ.* Талап, дәғүә йәки көс, яу менән ирекһеҙләп ҡыҫыу; ҡыҫмаҡҡа алыу. *Ҡарттар Аллабирҙене йәнә ҡыҫмаҡлап, Зөһрәне үҙенә иш итеүен һорай башлағас, ул .. теге далала осратҡан ят батырҙың әйткәнен иҫләп, шуның раҫҡа сығыуын уйлап ҡуя.* «Алдар менән Зөһрә». *Французлар килеп инде Мәскәү тигән калаға; урыҫ, башҡорт ҡыҫмаҡлағас, сығып ҡасты далаға* (Бәйеттән).

**ҠЫҪМЫР** *с. диал.* Һыҡмыр. *Ҡыҫмыр кеше.*

**ҠЫҪТА** *и. диал.* Ҡыҫала.

**ҠЫҪТАҠ** *и. иҫк.* Ҡыҫып, ҡыҫтап ирекһеҙләгән, йәберләгән мөнәсәбәт; ҡыҫым. *Бикйән ҡышын Бәйембәт картта үҙгарҙы, карттың яҡшылығы арҡаһында ҡыҫтаҡ күрмәне* (Әкиәттән).

**ҠЫҪТАҠЛАУ** *ҡ.* Ҡыҫып, ҡыҫтап ирекһеҙләү; көсләү. *Ҡыҫтаҡлап әйттереү.*

**ҠЫҪТАЛДЫРЫУ** *ҡ. эйһ. ф. ҡар.* **ҡыҫталыу** 2.

**ҠЫҪТАЛЫУ** *ҡ.* **1.** *төш. ҡар.* **ҡыҫтау** [1]. *[Борһан:] Халыҡ асыуы — ташҡын даръя, быуылып ятмаҫ, ярға ҡыҫталып.* М. Ғажи.

**2.** Ярауға ныҡ етешеү. *[Йәнтүрә ағай] тауҙы менеп еткәс, ҡыҫталып килгән тура атын туҡтатты.* Ғ. Ибраһим-Ҡыпсаҡ.

**ҠЫҪТАЛЫШЫУ** *ҡ. урт. ҡар.* **ҡыҫталыу** 1. *Ҡыҫталышып тороу.*

**ҠЫҪТАТЫУ** *ҡ. йөкм. ҡар.* **ҡыҫтау** [1]. *Ҡунаҡтар ҡыҫтатмай ғына берәр тиҫтәк һирпа эсте.* Ғ. Дәүләтшин.

**ҠЫҪТАУ** [1] *ҡ.* **1.** Тар, бәләкәй урынға көсләп һыйҙырыу. *Ҡыҫтап тултырыу. Ҡыҫтап тығыу. Кейемдәрҙе һандыҡҡа ҡыҫтап тултырыу.*

**2.** Көс менән ирекһеҙләп, ҡайҙалыр ҡыҫыу; ҡыҫырыҡлау. *Мөләк ағай .. Степандың яғаһынан алды ла, арбаһына ҡыҫтап, арҡаһы менән алып барып ҡыҫты.* Т. Хәйбуллин.

**3.** Ирекһеҙләп аныҡтырыу, йәһәтләп ҡыуыу. *Рәүфә .. дилбегәне тартҡылап, атты ҡыҫтаны.* Ә. Вәли.

**4.** Ниҙер эшләргә көсләү, ныҡ үтенеү. *Ашарға ҡыҫтау.* ■ *Өләсәйем .. ҡат-ҡат ҡыҫтап, сәй яһаны.* Р. Низамов. *Батшалар Таҙҙың төшөн һөйләтергә ҡыҫтай башланы, ти* (Әкиәттән).

● *Ярлыны ярға ҡыҫта.* Мәҡәл.

**ҠЫҪТАУ** [2] *с.* **1.** Нәмәләр һыйыр-һыймаҫтай ҡыҫынҡы; тар; киреһе иркен. *Ҡыҫтау өй. Ҡыҫтау урын.*

**2.** Ваҡыт мөмкинлеге әҙ; ашығыс. *Ҡыҫтау эш. Ваҡыт ҡыҫтау. // — Ҡоҙаса, тиҙ генә барып бауырһаҡ бешереш әле. Бик ҡыҫтауға килде бит, йәһәт бул.* Һ. Дәүләтшина.

**ҠЫҪТАШЫУ** *к. урт. кар.* **кыҫтау** [1] 4. *Минең менән һөйләшергә уның бер ҙә теләге юклыгын күреп, мин дә кыҫташманым.* Д. Исламов. *Ҡунактар бер-береһенә һылтап, һин бар ҙа, мин бар, тип кыҫташырга тотонган* (Хикәйәттән).

**ҠЫҪТЫБЫЙ** *и.* **1.** Сөсө йәймә эсенә тары бутҡаһы, иҙгән бәрәңге һ. б. ҡыҫтырып әҙерләнгән ашамлыҡ. *Ҡыҫтыбый ашау. Ҡыҫтыбый бешереү.*

**2.** *күсм.* Кәрәккән-кәрәкмәгәнгә ҡыҫылып йөрөүсән кешегә ҡарата әйтелә.

**ҠЫҪТЫРҒЫС** *и.* Ниҙе лә булһа ҡыҫтырып ҡуя торған нәмә. *Кер кыҫтыргыс. Ҡагыҙ кыҫтыргыс. Ҡалак кыҫтыргыс. Сәс кыҫтыргыс.*

**ҠЫҪТЫРЫЛЫУ** *к. төш. кар.* **кыҫтырыу.** *Ҡыҫтырылган итәк.*

**ҠЫҪТЫРЫУ** *к.* **1.** Ниҙеңдер ике араһына ҡалдырып ҡыҫыу. *Аяк араһына кыҫтырыу. Ишеккә кыҫтырыу.* ■ *Сәскә нәҙек оҙон папиросын бармак осона гына ҡыҫтырып, төтәтергә кереште.* Ф. Иҫәнғолов.

**2.** Ике араға тығыу. *Аҫка кыҫтырыу. Еккә кыҫтырыу. Тәгәрмәс аҫтына таш кыҫтырыу.* ■ *[Хәйруллин] түш кеҫәһенә янып торган кыҙыл яулык кыҫтырган.* С. Агиш. / Билғау, ҡултыҡ араһына тығыу. *Ҡултыкка китап кыҫтырыу.* ■ *Балтаны биленә кыҫтырып, шәп кенә атлап, урманга бара был егет* (Әкиәттән). / Ниҙеңдер остарын йыйып тығыу. *Итәкте кыҫтырыу. Сәсте кыҫтырыу.* ■ *Ауылдың муллаһы сәлләһенең койрогон түбәтәйенә кыҫтырган да .. өлкән яҫтык өҫтөнә ултырган.* Ғ. Дәүләтшин.

**3.** *күсм.* Урынлы-урынһыҙ араға ниҙер ҡатыштырыу. *Һүҙ кыҫтырыу.* ■ *Тәнзилә әбейҙең исемен кыҫтырып һөйләүҙәре Сәгиҙәгә окшаманы.* М. Тажи.

♦ **Ҡолаҡҡа ла ҡыҫтырмау** *кар.* **колаҡ. Һалпы яҡҡа һалам ҡыҫтырыу** маҡтап ҡупайтыу. *Әҙһәм карт [малайҙарҙы] мактап, һалпы яктарына һалам кыҫтырып, үҙе тирәһендә эшләтә.* Ж. Кейекбаев.

**ҠЫҪЫҠ** [1] *с.* **1.** Ябылыр-ябылмаҫ булып ҡыҫылып торған. *Ҡыҫык күҙ. Ишек кыҫык калган, япмагандар.*

**2.** *диал.* Тар, ҡыҫтау.

♦ **Ҡыҫыҡ сикә** 1) оҙонса, тар яңаҡ. *Ҡыҫык сикәле кеше;* 2) асыусан, үсексән.

**ҠЫҪЫҠ** [2] *и.* **1.** Ике тау араһы. *Ҡыҫык еле. Ҡыҫык юлы.* ■ *Мөһабәт тауҙары, хәтәр кыҫыктары, серле мәмерйәләре менән тылсымлы әкиәт булып күңелгә һеңеп калган ул ерҙәр.* З. Биишева.

**2.** Еткерә ябылмаған ара. *Ишек кыҫыгы аша Хәбир Зәкиҙең ҙур кәүҙәһен күрҙе.* Ә. Вахитов.

**ҠЫҪЫЛДЫРЫҠ** *и. диал. кар.* **кыҫтыбый** 2.

**ҠЫҪЫЛЫУ** *к.* **1.** *төш. кар.* **кыҫыу.** *Мылтык кулда нык кыҫылды, ә йөрәктә бик ҙур батырлык.* Р. Ниғмәти.

**2.** Арала ҡалып һығылыу. *Бармак ишеккә кыҫылды.* ■ *[Булат:] Лавкага инерлек түгел. Халык күп. Гөләйшә инәйем, бахыр, кайҙа кыҫылып калды икән?* К. Кинйәбулатова. / Араны бөтөрөп, тығыҙланыу. *Ҡыҫылып ултырыу.* ■ *Юл текә каяларга кыҫылган.* Ә. Бикчәнтәев.

**3.** Әҙ генә ара ҡалдырып ябылыу, яртылаш йомолоу. *[Юламан карт] кыҫылып торган сөм кара күҙҙәрен диңгеҙгә төбәгән.* З. Биишева.

**4.** Ике араға ҡыҫылып инеү. *Ит тешкә кыҫылды.* ■ *[Фатима] иҙән егенә кыҫылган тарагына үрелде.* Б. Бикбай.

**5.** Баҫым, ҡыҫым арҡаһында тартылыу, бәләкәсәйеү. *Есемдәр һыуыктан кыҫыла.*

**6.** Ҡыҫҡан кеүек, тарайыу; ҡыҫтауланыу. *Күкрәк кыҫыла. Һулыш кыҫыла.* ■ *Сәгиҙәнең өҫтөндәге пальтоһы әллә нисек тарайып, тыны кыҫыла башланы.* М. Тажи.— *Кем һуң мине мәжбүр итте шуга, кем һуң! — тине, тауышы кыҫылды.* Ғ. Сәләм.

**7.** *күсм.* Урынлы-урынһыҙ эш, һүҙ араһына тығылыу. *Һүҙгә кыҫылыу.* ■ *Айҙар бик тынгыһыҙ малай, кыҫылмаган ере юк. Атаһы бер китап алһа, килеп етә шунда ук.* Х. Ғиләжев.

**8.** *күсм.* Аҡсаны, аҙыҡты бик әҙләп, бик һаҡлап тотоноу. *Ҡыҫылып донъя көтөү.*

♦ **Йөрәк кыҫылыу** *кар.* **йөрәк** 2.

● *Ҡыш — кыҫыл, яҙ — яҙыл.* Әйтем.

**ҠЫҪЫЛЫШ** *и.* Берәй эш-хәлгә туранан-тура булған бәйләнеш; ҡатнашлыҡ. *[Сибәгәтулла — Билалга:] Уныһы минең үҙ эшем. Миндә бер кемдең дә кыҫылышы юк.* М. Тажи. *Бер бәйге, бер йыйын карттың кыҫылышынан башка үтмәй.* Б. Бикбай.

**ҠЫҪЫЛЫШЫУ** *к.* **1.** *урт. кар.* **кыҫылыу** 2. *Ике ҙур ишек шаран-яра асып куйылган. .. Халык менән кыҫылышып мин дә индем.* С. Агиш.

**2.** *күсм. кар.* **кыҫылыу** 7.— *Тукта әле, Теүәлбай, кыҫылышаһың да ултыраһың!* Ғ. Дәүләтшин.

**ҠЫҪЫМ** *и.* **1.** Ҡыҫыу, баҫыу, этеү көсө. *Халыктың кыҫымы аҫтында ишек шатырлай башланы.* Х. Мохтар.

**2.** Кемдеңдер ирек, ҡылығына яһалған көслөк; баҫым. *Политик кыҫым. Ҡыҫымга алыу.*

**3.** Кемдеңдер ирек, хоҡуғына яһалған көслөк; золом. *Дин кыҫымы.* ■ *Электән килгән кыҫым өҫтөнә ауыр һалым .. өҫтәлгән.* Ә. Вахитов.

**4.** Ҡоралды һөжүм. *Ҡаҙактарҙың кыҫымына түҙмәй фашистар каланы ташлап сигенде.* З. Рафиҡов.

**ҠЫҪЫНҠЫ** *с.* **1.** Һыйыр-һыймаҫ урынлашырлыҡ; тар, ҡыҫтау. *Ҡыҫынкы өй.*

**2.** Кәрәк-яраҡ йәһәтенән етешһеҙ. *Малга аҙык кыҫынкы. // Ҡыҫынкы тороу.* ■ *Унда ер кыҫынкы, малды күп аҫрап булмай.* Ғ. Фәхретдинов.

**ҠЫҪЫНҠЫЛЫҠ** *и.* **1.** Тар, ҡыҫынҡы хәл. *Ялан яктарына килеп сыккас, ул [һыу], кыҫынкылыктан һәм баш әйләндергес боролмаларҙан котолоп, йәйрәп, киң йылга булып, тынысырак ага башлай.* Б. Бикбай.

**2.** Ирек, хоҡуҡ йәһәтенән сикле хәл. *Йәшәйҙәр хәҙер тотконлокта, көн күрмәйҙәр кыҫынкылыкта.* М. Ғафури.

**3.** Кәрәк-яраҡ йәһәтенән етешһеҙ хәл. *Башкорттар ерһеҙ калыуын, бөлгөнлөккә, кыҫынкылыкка калыуын рус крәҫтиәндәренән күрҙе.* Т. Йәнәби.

**ҠЫҪЫР** *с.* **1.** Тейешле ваҡытында быуаҙымаған (һыйыр, һарыҡ, кәзә һ. б. ҡарата). *Ҡыҫыр калыу.* ■ *Иҫәп китабында кайһы һыйырҙың*

*быуаҙ, ҡайныһының ҡыҫыр икәне лә йүнләп яҙылмаған. Һыйыр һөт бирмәһә, һыуалған ти ҙә ҡуялар.* Р. Солтангәрәев.

**2.** Орлоҡ бирмәгән, орлоҡһоҙ. *Ҡыҫыр башаҡ. Ҡыҫыр сәскә.* ■ *Яландарҙа сәскәләр күп, еҫтәренең күп сихыры, ләкин шулар араһында ысыны бар, бар ҡыҫыры.* Н. Нәжми.

**3.** Ямғыр килтермәгән, ямғырһыҙ (болотҡа ҡарата). *Нисәмә көн күктә томалаған ямғырһыҙ ҡыҫыр һоро болоттар тарала башланы.* Ф. Мансуров.

**4.** Иген сәселмәгән; буш. *Әле .. эрем, һарут баҫҡан ҡыҫыр яландар тулыһынса һөрөлөп сәселмәгән, әле көтөү өмөттәре өҙөлмәгән.* И. Абдуллин. // *Һинең ҡыҫыр ятҡан сиҙәмдәрең тракторҙар менән һөрөлә.* Б. Вәлит.

**5.** Итһеҙ, майһыҙ, һыуға бешкән (ашҡа ҡарата).— *Һәр көн ит ашап булмаҫ. .. Бына минең әсәйем .. итте аҙнаһына ике генә бешерә торғайны. Башҡа көндәрҙә әсе ҡатыҡлап, ҡыҫыр аш ашай инек.* З. Биишева. *Ҡатынына өгөт бирә [Миңнулла]: һаҡ тотон, ти, аҙыҡҡа, бер итле аш, биш ҡыҫыр аш, унан борол балыҡҡа.* Т. Арслан.

**6.** *күсм.* Тейешле йөкмәткеһе, тейешле сифаты булмаған; буш. *Ҡыҫыр көйөккә көйөү. Ҡыҫыр хыял. Ҡыҫыр шатлыҡ.* ■ *Мөхәббәтһеҙ ҡыҫыр ғүмерҙең шул — ни йәме лә уның, ни тәме.* Х. Ғиләжев. // *[Дәрүиш:] Ерҙең күпме ниғмәттәренән, ләззәттәренән мәхрүм булғанмын мин. Ҡыҫыр үткән ғүмерем өсөн үкенәм мин.* М. Кәрим.

♦ **Ҡыҫыр ҡалыу** өлөшһөҙ, буш ҡалыу. *[Нух:] Ләғнәт, йылмаяҡ, мөстән, ер йоткор! .. Эт һимерһә, эйәһен тешләр, ти. Башбаштаҡланып йөрөмәһә, ҡыҫыр ҡалыр ине шул!* Ж. Кейекбаев.

**ҠЫҪЫРАЙЫУ** *ҡ.* Эстәлекһеҙ, буш булып ҡалыу. *[Ныязғолдоң] был ҡарашынан Айбулаттың эсен һыуыҡ алған кеүек булып, йәне ҡыҫырайҙы.* Һ. Дәүләтшина.

**ҠЫҪЫРАҠ** [1] *и. иҫк.* Ҡыҫыр мал. *Ҡыҫыраҡтар көтөүе.* ■ *Батша тегә ике ҡатынға: «Ҡырҡ ҡыҫыраҡ кәрәкме, ҡырҡар утын кәрәкме?» — тигән. «Утын нимәгә, ҡырҡ ҡыҫыраҡты һауып эсербеҙ»,— тигән тегә ҡатындар* (Әкиәттән).

**ҠЫҪЫРАҠ** [2] *с. диал.* Ҡыҫыр.

**ҠЫҪЫРЫҠ** *с. диал.* Ҡыҫынҡы.

**ҠЫҪЫРЫҠЛАНЫУ** *ҡ. төш. ҡар.* **ҡыҫырыҡлау.** *Аҡтарҙың бер өлөшө йылғаға ҡыҫырыҡланды.* Я. Хамматов.

**ҠЫҪЫРЫҠЛАУ** *ҡ.* Көс менән ирекһеҙләп, ҡыҫыу. *Ҡыҫырыҡлап сығарыу. Ярға ҡыҫырыҡлау.* ■ *Ташлыйылғаның ҡүм-ҡүк боҙҙары .. бер-береһен ҡыҫырыҡлай-ҡыҫырыҡлай, ҡуҙғалып та китте.* М. Тажи. *[Таңдыҫа:] Эй батыр ир, батыр ир, .. дошмандарын ҡамалап, ҡыҫырыҡлап ҡырған ул.* «Ҡуңыр боға».

**ҠЫҪЫРЫН** *с. диал.* Ҡыҫынҡы, ҡыҫтау. *Ҡыҫырын булмә.*

**ҠЫҪЫУ** [1] *ҡ.* **1.** Ике араға ҡалдырып һығыу. *Ҡыҫаға ҡыҫыу.* / Ике яҡлы, ике сатлы нәмәне ҡымтып, ҡуша килтереү. *Иренде ҡыҫыу.* ■ *Айбулаттың сәләмен ул [Ныязғол] бик аҡрын ғына ҡабул итте, тешен ҡыҫып ҡына яуап бирҙе.* Һ. Дәүләтшина.

**2.** Асылыр-асылмаҫ итеп, ара ҡалдырып ҡуйыу. *Күҙҙе ҡыҫыу. Ишекте ҡыҫыу.*

**3.** Сығыр-сыҡмаҫ итеп кәметеү. *Шәмде ҡыҫыу. Газды ҡыҫыу. Ҡыҫып ҡуйған шәм.* ■ *Филтәһен ҡыҫып, һүндермәй ҡалдырған яңғыҙ шәм яҡтыһы ғына үҙҙәренең тәҙрәһе аша күренә.* Я. Хамматов.

**4.** Уратып алып һығыу. *Беләктән ҡыҫып тотоу. Билдән ҡыҫыу. Ҡосаҡҡа ҡыҫыу. Ҡулды ҡыҫып күрешеү. Ҡыҫып быуыу. Ҡыҫып бәйләү. Ҡыҫып ҡосаҡлау.* ■ *Һүҙ әйтмәне, күкрәгенә ҡыҫты, беләгемә тамды йылы йәш.* Ғ. Сәләм. *Күңелдәрҙә ғәйрәт яралды, ҡулдар ҡыҫып тотто ҡоралды.* М. Кәрим.

**5.** Тығыҙ, тар булып, тынысһыҙлау. *Итек аяҡты ҡыҫа.* ■ *Һоро шинель, яҫы ҡайыш ҡыҫа нәҙек билемде* (Бәйеттән).

**6.** Һыҡҡан, быуған һымаҡ итеп, тарыҡтырыу. *Күкрәкте ҡыҫыу. Тынды ҡыҫыу.* ■ *Минең .. асыуҙан сикәләрем ҡыҫа башланы.* Ф. Исәнғолов. *Гөлсөм иҫенә төшкәс, Баҡыйҙың йөрәге ҡыҫып-ҡыҫып алды.* Я. Вәлиев.

**7.** Көс менән ирекһеҙләп ҡыҫтау; ҡыҫырыҡлау. *Ситкә ҡыҫыу.* ■ *Эшселәрҙе һаман штыҡ менән ҡыҫырға команда бирҙеләр.* Д. Юлтый.

**8.** Нindәйҙер талап, дәғүә менән ирекһеҙләү; ҡыҫмаҡлау.— *Районда ҡыҫалар, һеҙҙе түгел, мине, минән талап итәләр. Колхоз өсөн мин яуап бирәм.* М. Тажи. *Тәүкәй мулла: — Йә, батыр егет. Ни өсөн минең малайҙың алып ҡайтып килгән көлтәһен юлда талап алып, уҙ ырҙынынға ҡуйып ятаһың, ахмаҡ, алйот! — тип, .. Ғәйни ағайҙы ҡыҫырға тотондо.* Т. Йәнәби.

**9.** Ирек, хоҡуҡты быуыу; ситләтеү. *Үгәй әсә балаларҙы, тар күңеле менән ҡыҫып, һәр ваҡытта мәшәҡәттә аҫрай.* М. Ғафури. *Ағалары йәгни общинаның башҡа ағзалары уны [Заятүләкте] ҡыҫа, ситләтә, нисек тә һылтау табып, уны күҙҙән төшөрөргә тырыша.* К. Мәргән.

**10.** *күсм.* Иркен, мул тотмай, үлсәм, самаға һалыу. *Аҡсаны ҡыҫып тотоу. Ашауҙы ҡыҫыу.* ■ *[Бай:] Эш хаҡын ҡыҫа, һаран, фәлән-төгән, тип һуҡрана башлайһығыҙ.* И. Көҫәпҡол.

♦ **Ҡойроҡто ҡыҫыу** *ҡар.* **ҡойроҡ.**

● *Балаһы атҡа менһә, атаһы ботон ҡыҫыр.* Мәҡәл. *Былтыр ҡыҫҡанға быйыл ҡысҡырмайҙар.* Әйтем.

**ҠЫҪЫУ** [2] *и.* Ике ҡат таҡта бураның араһына ҡыҫылған нәмә. *Ҡыҫыуына бысҡы табы тултырып, таҡтанан дөйөм торлаҡ төҙөлдө.* Ә. Вәли.

**ҠЫҪЫШЫУ** *ҡ. урт. ҡар.* **ҡыҫыу** [1] 1—4. *Күҙ ҡыҫышыу. Ҡул ҡыҫышыу.*

**ҠЫТ** [*ғәр.*] *с.* Ихтыяж талабынан әҙ, етешһеҙ; йот. *Утын, квартира яғы ҡытыраҡ.* Х. Ғиләжев.

**ҠЫТАЙ** [1] *и.* Ҡытайҙың төп халҡын тәшкил иткән милләт һәм шул милләттең бер кешеһе. *Ҡытай халҡы. Ҡытай ҡатыны. Ҡытай теле.*

**ҠЫТАЙ** [2] *и. диал.* Мунсаҡ. *Быяла ҡытай. Гәрәбә ҡытай. Мәрйен ҡытай.*

**ҠЫТАЙСА** *р.* **1.** Ҡытай телендә. *Ҡытайса һөйләшеү. Ҡытайса уҡыу.*

**2.** Ҡытай халҡына хас, ҡытайҙар кеүек. *Ҡытайса бейеү. Ҡытайса кейенеү.*

**ҠЫТАҠ-ҠЫТАҠ, ҡытаҡ та ҡытаҡ** *оҡш.* Тауыҡ ҡысҡырған тауышты белдергән һүҙ. *Әмир*

*баш осонда тауыҡ ҡыткылдауына уяныпкитте... -Ҡытаҡ-ҡытаҡ, ҡыт-ҡытаҡ.* Х. Ғиләжев.

**ҠЫТАҠЛАУ** *ҡ.* Ҡытаҡ-ҡытаҡ итеү, ҡытаҡ-ҡытаҡ килеү. *Әбей ҡоштарына тары һибә тигеҙ итеп бүлеп, уртаҡлап, ошо минут тағы ике тауыҡ таш келәттән сыҡты ҡытаҡлап.* Т. Арслан.

● *Күкәй һалмаҫ тауыҡ көн әлгәре ҡытаҡлар.* Мәҡәл.

**ҠЫТАҠЛАШЫУ** *ҡ. урт. ҡар.* **ҡытаҡлау.** *Тауыҡтар ҡытаҡлаша.*

**ҠЫТАТ** *и.*, **ҡара ҡытат** Боронғо беше ҡара тауар. *Ҡара ҡытат елән ай иңемдә, ҡара ебәк билгау билемдә* (Халыҡ йырынан). // *Ҡытат күлдәк кейеп, ҡыя баҫып, йөрөй микән минең гүзәлем* (Халыҡ йырынан).

**ҠЫТҠЫЛДАҠ** *с.* Гел ҡытҡылдап тороусан. *Ҡытҡылдаҡ тауыҡ.*

**ҠЫТҠЫЛДАТЫУ** *ҡ. йөкм. ҡар.* **ҡытҡылдау.** *Тауыҡты ҡурҡытып, ҡытҡылдатыу.*

**ҠЫТҠЫЛДАУ** *ҡ.* **1.** Ҡыт-ҡыт итеү, ҡыт-ҡыт килеү. *Абыстайға тағы шатлыҡ өҫтәп, ҡытҡылданы сыбар тауығы: «Яңы йомортҡамды кереп алсы», тигән кеүек уның тауышы.* Ғ. Дәүләтов. *Тауыҡ бер көндө йомортҡа һалған да ҡытҡылдарға тотонған* (Әкиәттән).

**2.** *күсм.* Ҡыт-ҡыт, ҡыһ-ҡыһ итеү (көлгәндә). *Икенсе берәү үҙ һүҙенең ҡыҙығына алдан уҡ ҡытҡылдап көлдө.* С. Агиш.

**ҠЫТҠЫЛДАШЫУ** *ҡ. урт. ҡар.* **ҡытҡылдау.** *Тауыҡтар ҡытҡылдаша.*

**ҠЫТ-ҠЫТ** *оҡш.* Тауыҡ ҡысҡырған тауышты белдергән һүҙ; ҡытаҡ-ҡытаҡ. *Ҡыт-ҡыт ҡытҡылдай тауыҡтар, ҡаҙҙары ҡаңғылдаша.* Ш. Бабич.

**ҠЫТ-ҠЫТАҠ** *оҡш.* Тауыҡ ҡысҡырған тауышты белдергән һүҙ; ҡытаҡ-ҡытаҡ.

**ҠЫТЛЫҠ** *и.* **1.** Аҙыҡҡа, игенгә булған юҡсыллыҡ; йотлоҡ, аслыҡ. *Ҡытлыҡ килеү.* // *Ҡытлыҡ йыл.* ■ *1921 йылғы ҡытлыҡтың Башҡортостан ауыл хужалығын ҡаҡшатыуы бигерәк тә ныҡ булды.* «Совет Башҡортостанының ун йылы», 1929. *Урак өҫтөндә .. герман һуғышы сығып, бәкәлгә һуҡты. Йәнә ҡытлыҡ башланды.* Ф. Иҫәнғолов.

**2.** *күсм.* Нимәгәлер булған етешһеҙлек, ярлылыҡ. *Аҡсаға ҡытлыҡ. Ҡағыҙға ҡытлыҡ.* ■ *Магазиндарҙа алмаға ҡытлыҡ осор.* Н. Мусин. *Репертуар ҡытлығынан ҡотолоу өсөн беҙ ярышып-ярышып ситтән пьеса күсереп алып ҡайта торғайныҡ.* К. Мәргән.

**ҠЫТЫ** *с. диал.* Эре, һауалы. *Ҡыты кеше.*

**ҠЫТЫЙ-ҠЫТЫЙ** *и.* Ҡытыҡларға иткәндә кешенең ҡытығын саҡыра торған һүҙ. *Ҡытый-ҡытый итеү.*

□ **Ҡытый-ҡытый уйнау** ҡытыҡлашыу, ҡытыҡлашып шаярыу.

**ҠЫТЫҠ** *и.* **1.** Йыбырлап тәнгә тейгәндә барлыҡҡа килгән кисереш. *Ҡытыҡ килеү. Ҡытыҡты йәшереү.*

**2.** *күсм.* Күңелдә һәр ваҡыт өйкәп торған йәшерен уй, хис. *Өлкән лейтенанттың һуңғы һүҙҙәре Сираевтың ҡытығы килгән ергә төртөлдө.* Н. Мусин.

**ҠЫТЫҠЛАНЫУ** *ҡ. ҡайт. ҡар.* **ҡытыҡлау.** *Табан ҡытыҡлана.*

**ҠЫТЫҠЛАТЫУ** *ҡ.* **1.** Ҡытыҡларға ирек ҡуйыу. *Кешенән үҙеңде ҡытыҡлатыу.*

**2.** *йөкм. ҡар.* **ҡытыҡлау.** *Кешене берәүҙән ҡытыҡлатыу.*

**ҠЫТЫҠЛАУ** *ҡ.* **1.** Бармаҡ менән тәнде йыбырлатып ҡытыҡ уятыу. *Ҡытыҡлап көлдөрөү.* / Йыбырлаған хис уятыу. *Ҡар бөртөктәре .. танау осона ҡунып ҡытыҡлай.* З. Әхмәтов.

**2.** *күсм.* Наҙлап, тәмле, рәхәт хис уятыу. *Өй йылы. Аш еҫе танауҙы ҡытыҡлай.* К. Кинйәбулатова.

**3.** Болоҡһотоу, елкендереү. *Күңелде ҡытыҡлау.* ■ *Яҡты хыял биреп, ҡытыҡланың керһеҙ күңелде.* М. Хәй.

**ҠЫТЫҠЛАШЫУ** *ҡ. урт. ҡар.* **ҡытыҡлау** 1. *Ҡытыҡлашып уйнау.* ■ *Пассажирҙар тора ҡышта, автобусты көтөп тышта, тыпыр-тыпыр бейешәләр, ҡытыҡлашып көлөшәләр.* Х. Түләкәев.

**ҠЫТЫҠСАН** *с.* Тиҙ генә ҡытығы килеүсән. *Ҡытыҡсан кеше. Ҡытыҡсан булыу.*

**ҠЫТЫ-МЫТЫ** *и. йыйн.* Ваҡ-төйәк нәмә. // *Ҡыты-мыты аҙыҡ.* ■ *[Ғәлим:] Район үҙәгенән ҡайтып киләм әле, .. ҡыты-мыты алдым.* З. Хисмәтуллин.

**ҠЫТЫМЫШ** *с. диал.* Һыҡмыр.

**ҠЫТЫР** [1] *оҡш.* Ҡытыршы, ҡаты нәмәнең өҫтөнән икенсе бер ҡаты нәмәне һөйрәгәндә, ҡаты нәмәне кимергәндә, онтағанда сыҡҡан тауышты белдергән һүҙ. *Ҡытыр итеп ҡалыу.*

**ҠЫТЫР** [2] *и. диал.* Ҡыйыр. *Икмәк ҡытыры.*

**ҠЫТЫРАЙЫУ** *ҡ. диал.* Ҡылтайыу, асыуланыу. *Зәлифә ни өсөндөр был юлы «иркәм» тигәндә ҡытыраймайы.* Ғ. Дәүләтшин.

**ҠЫТЫР-ҠЫТЫР** *оҡш.* Ҡабат-ҡабат ҡытыр иткән тауышты белдергән һүҙ. *Ҡытыр-ҡытыр итеү. Ҡытыр-ҡытыр килеү.*

**ҠЫТЫРЛАҠ** *с.* Ҡытыр-ҡытыр итеп торған. *Ҡытырлаҡ шөкәрә.*

**ҠЫТЫРЛАТЫУ** *ҡ.* Ҡытыр-ҡытыр иттереү, ҡытыр-ҡытыр килтереү. *Ҡытырлатып кимереү.*

**ҠЫТЫРЛАУ** *ҡ.* Ҡытыр-ҡытыр итеү, ҡытыр-ҡытыр килеү.

**ҠЫТЫРЛЫ** *с.* Тигеҙһеҙ, ҡытырмаҡлы, ҡытыршы. *Ҡытырлы юл.*

**ҠЫТЫРМАҠ** *и.* Сурайып-сурайып ҡалҡып сыҡҡан ҡытыршы. // *Ҡытырмаҡ юл.* ■ *Ҡытырмаҡ боҙҙар аяҡ аҫтында сатнап, ватылып ята.* З. Биишева.

**ҠЫТЫРМАҠЛЫ** *с.* Ҡытырмаҡ менән ҡаплаулы. *Ҡытырмаҡлы юл.*

**ҠЫТЫРШЫ** *с.* **1.** Тигеҙ, шыма ғына түгел, тигеҙһеҙ. *Ҡытыршы юл. Ҡытыршы таҡта. Ҡытыршы булыу.* ■ *Үрмәләүе ауыр. Стена шыма, ағас олоно кеүек ҡытыршы түгел.* А. Ғирфанов.

**2.** *күсм.* Еренә еткереп, килешле, шыма итеп эшләнмәгән; етешһеҙлекле. *Ҡытыршы әҫәр.* ■ *Поэмала тел һәм стиль яғынан ҡытыршы урындар ҙа бар әле.* Ғ. Рамазанов.

**ҠЫТЫРШЫЛАНЫУ** *ҡ.* Ҡытыршы (1 мәғ.) хәлгә килеү, ҡытыршыға әйләнеү, ҡытыршы булыу. *Ҡулды бик йыш һабынлап йыуырға тура килә. Шуның өсөн ҡул тиреһе кибә, ярыла, ҡытыршылана башлай.* «Башҡортостан ҡыҙы», 1968, № 11.

**ҠЫТЫРШЫЛЫҠ** *и.* **1.** Килешле, шыма булып бөтмәгән сифат; етешһеҙлек. *Журнал хәҙерге тел менән әйтерлек тулы, етеш йөкмәткеле була алманы. Тел яғынан да ҡытыршылыҡтары күп булды.* Т. Йәнәби.

**2.** *күсм.* Ҡатмарлылыҡ, ҡыйынлыҡ. *Тормош ҡытыршылыҡтары.*

**ҠЫТЫРЫЙ** *и. диал.* Ҡыйыр. *Икмәк ҡытырыйы.*

**ҠЫУ** [1] *с.* **1.** Ултырған көйө ҡороған, кипкән. *Ҡыу ботаҡ. Ҡыу үлән.* ■ *Тәбиғәттә шундай һайланыш бар: бүҙәнәгә тартай иш булмаҫ; ялҡау менән бергә эш уңмаҫ; ҡыу ботаҡҡа, беләм, ҡош ҡунмаҫ.* В. Ишмурзин. *Кеше .. һарғайған ҡыу кесерткәнде ярып, туп-тура Сабира апай баҡсаһына ынғайланы.* Ф. Иҫәнғолов. **Ҡыу ағас** тамырында ҡороған ағас. / Кибеп ҡатҡан; ҡоро. *Ҡыу сыбыҡ.* ■ *Ҡыу таяҡҡа таянып, ул мал көтмәҫ тимәгеҙ* (Ҡобайырҙан).

**2.** *күсм.* Бер нәмәһеҙ буп-буш. *Ҡуралы буйы ҡыу татыр, ҡурай булмаҫ тимәгеҙ* (Ҡобайырҙан).

◆ **Ҡыу баш** *кар.* **баш** 1. **Ҡыу томшоҡ** *кар.* **томшоҡ.**

● *Ҡыу ағасҡа ҡош ҡунмаҫ.* Мәҡәл.

**ҠЫУ** [2] *и.* Ҡайынға тояҡ һымаҡ булып, ороланып сыҡҡан бәшмәк; ҡыуау. *Ҡуҙый янын ҡапшап ҡараны. Кеҫәһендә шаҡмаҡ таш менән ҡыу бар икән. Йәһәт кенә ҡыуға ут ҡаҡтырып, оҫҡон төшөрөп ҡабыҙҙы.* «Ҡуҙыйкүрпәс менән Маянһылыу».

**ҠЫУА** *с. диал. кар.* **ҡыу** [1] 1.

**ҠЫУАЗ** *и. диал.* Үс, ҡон. *[Нәфисә:] Беҙгә Нигмәтулла көн күрһәтмәйәсәк, ҡыуаз ҡайтарасаҡ.* Я. Хамматов.

**ҠЫУАҠ** *и.* **1.** Төбөнән үк тармаҡланып үҫә торған ваҡ ағас. *Ҡарағат ҡыуағы. Сейә ҡыуағы. Әлморон ҡыуағы.* ■ *Бара торғас, йомро һуҡмаҡ та бөттө, улар [Тәнзилә әбей менән Сәғиҙә] кеше бейеклеге булып үҫкән ҡурай еләге ҡыуаҡтары араһына инеп китте.* М. Тажи.

**2.** Төбөнән шәлкем-шәлкем булып таралған һабаҡлы үҫемлек. *Ер еләге ҡыуағы. Сәй ҡыуағы.* ■ *Күшеккән ҡоштар төркөмөләй ошо көҙҙөң һуңғы сәскәләре ҡыуаҡ-ҡыуаҡ ултыра түтәлдәрҙә.* М. Кәрим.

● *Өй артында ҡыуағың булһа, һандуғас ҡунағың булыр.* Әйтем.

**ҠЫУАҠАН** *и.* Бер башҡорт ырыуының атамаһы һәм шул ырыуҙың бер кешеһе. *Ҡыуаҡан башҡорто.* ■ *Емешкә был ҡатай ҡыҙының [Шәмсиәнең] ҡыуаҡан диалектында шундай йомшаҡ, яғымлы итеп һөйләшеүе оҡшаны.* З. Биишева.

**ҠЫУАҠЛАНЫУ** *ҡ.* Ҡыуаҡҡа әйләнеү, ҡыуаҡ булыу. *Ҡыуаҡланып үҫеү.*

**ҠЫУАҠЛЫҠ** *и.* Ҡыуаҡ үҫкән урын. *Зөлхизә ҡапыл .. ҡыуаҡлыҡ араһына инеп йәшенгән.* Н. Иҙелбай.

**ҠЫУАЛ** *и.* **1.** Ҡабығы һыҙырылған нәҙек йүкә ағасы. *Ҡыуал һаплы, имән тешле тырма әҙер тора.* Ғ. Дәүләтов.

**2.** Ҡармаҡ сыбығы. *Ҡулыңа ауырлыҡ беленһә, ҡыҫҡа ғына ҡыуалыңды эргәңә ташлап, әйҙә һөйрөйһең ебеңде.* Ф. Иҫәнғолов.

**3.** *диал. кар.* **ҡолға** 1. *Буҙансы батыр арҡандың бер осон ҡыуалға бәйләп, ер аҫтына төшөп киткән* (Әкиәттән). / Тауыҡ төнәргә ҡуйған таяҡ; төнәк.

**4.** *диал. кар.* **ҡолға** 2.

**5.** *диал.* Баҡан.

**ҠЫУАЛАТЫУ** *ҡ.* **1.** *йөкм. кар.* **ҡыуалау.** *Абдулла ахун ил аралап, һалым һалған һәр йортҡа. Көтөү-көтөү ҡыуалатҡан түләмәгәнде судҡа* (Халыҡ йырынан).

**2.** Кемдең йәки ниҙеңдер артынан ҡыуыу; баҫтырыу. *Ҡыуалатып барыу. Ҡыуалатып килеү. Ҡыуалатып тотоу.* ■ *Эй һыҙғыра Шамил да, эй һыҙғыра Камил да. Геү киләләр, йүгерәләр ҡуянды ҡыуалатып.* Ш. Галин.

**ҠЫУАЛАУ** *ҡ.* **1.** Бер ерҙән, яндан китергә талап итеү; ҡыуыу.— *Сығып кит, күҙемә күренмә,— тип [Шәхми] инспекторҙы ҡыуалай башланы.* Т. Йәнәби. / Ҡайҙалыр барырға талап итеү; ҡыуыу. *Эшкә ҡыуалау.*

**2.** Ашыҡтырып, ҡыҫтап, тиҙләтеү; ҡыуыу. *Ҡарт арбанан төштө лә, тәженән һөйрәй-һөйрәй, атын ҡыуаланы.* М. Тажи.

**3.** Арттан баҫтырыу; ҡыуыу. *Ҡыуалап килеп тотоу.*

**4.** Әйләп алып барыу, әйләп ҡыуыу. *Мал ҡыуалау.* ■ *Әрһеҙ ел Ағиҙел буйы урмандарының ҡойолған япраҡтарын ҡыуалай.* Д. Исламов.

**5.** *күсм.* Нисәлер йәште йәшәй башлау. *Алтмышты ҡыуалау.*

**ҠЫУАЛАШЫУ** *ҡ. урт. кар.* **ҡыуалау** 2, 4. *Мал ҡыуалашыу.*

**ҠЫУАН** *с.* Ҡоп-ҡоро яман эҫе. *Ҡыуан йыл.* ■ *Эй ямғырҙар, ниңә шулай яманығыҙ элек һеҙ?.. Һыуһап көттөк, сарсап бөттөк, ялбарҙыҡ ҡыуан яҙҙа.* Р. Ғарипов. // *Әрәмәлек, һары талдар, муйылдарҙың япрағы королоҡ, саскау, ҡыуандан ҡойолған ҡалтыраныпт.* М. Тажи. / Бик эҫе, көйҙөргөс. *Республиканың көньяҡ районларында ҡайһы бер йылдарҙа үҫемлекте көйҙөрә торған ҡыуан елдәр иҫеп ҡуя.* М. Хисмәтов.

**ҠЫУАНДЫРЫУ** *ҡ.* Ҡыуанырға сәбәп биреү; шатландырыу. *Баланы ҡыуандырыу.*

● *Яҡшы бала үҙен-үҙе ҡыуандырыр.* Мәҡәл.

**ҠЫУАНЛАТЫУ** *ҡ.* **1.** Ҡыуанға әйләндереү, ҡыуан итеү. *Көндө ҡыуанлатыу.*

**2.** *эйһ. ф. кар.* **ҡыуанлау.** *Ҡыуанлатып тора.*

**ҠЫУАНЛАУ** *ҡ.* Ҡыуанға әйләнеү, ҡыуан булыу. *Көн ҡыуанлап тора. Ауыл халҡы «ҡарға бутҡаһы» яһап, ямғыр яуҙырырға әҙерләнә.* Ғ. Хәйри.

**ҠЫУАНЛЫ** *с. диал.* Гөманлы.

**ҠЫУАНҺЫТЫУ** *ҡ.* **1.** Ҡыуанға әйләндереү, ҡыуан итеү. *Эҫе ел көндө ҡыуанһытты.*

**2.** *эйһ. ф. кар.* **ҡыуанһыу.** *Ҡыуанһытып тора.*

**ҠЫУАНҺЫУ** *ҡ.* **1.** Ҡыуанға тартыу. *Көн ҡыуанһып тора.*

**2.** *күсм.* Ҡотһоҙ, йәмһеҙгә әйләнеү. *Өй буш тороп, ҡыуанһып киткән.*

**ҠЫУАНЫС** *и.* Күңелгә ҙур ҡәнәғәтлек, рәхәтлек биргән хис; кинәнес, шатлыҡ, һөйөнөс. *Ҡыуаныс артыу. Ҡыуаныс кисереү.* ■ *Алдан хәбәр итмәй-нитмәй улының хеҙмәттән ҡайтыуы Татлыбикә өсөн күкрәгенә һыя алмаҫлыҡ ҡыуаныс булды.* Я. Хамматов.

**ҠЫУАНЫСЛЫ** *с.* Ҡыуаныс менән һуғарыулы. *Ҡыуаныслы тауыш. Ҡыуаныслы тормош.* // *Ҡыуаныслы йылмайыу.* ■ *Ғәйни ағайға был йыл үҙ ғүмерендә күргән иң ҡыуаныслы йылдарҙың береһе булып күренде. Ул быйыл шатлығы менән быға тиклем күргән нужаларын онотоп бөтә яҙҙы.* Т. Йәнәби. *Яланбикә Гөлйөҙөмдө ҡыуаныслы үсекләп көлә.* Һ. Дәүләтшина. / Ҡыуаныс уятырлыҡ. *Ҡыуаныслы хәбәр.* ■ *Беҙҙе ебәрмәйәсәктәр, имеш, тигән хәбәр бар. Һалдаттар өсөн был хәбәр ҡыуаныслы.* Д. Юлтый.

**ҠЫУАНЫСҺЫҘ** *с.* Ҡыуанысы юҡ, күңелһеҙ. *[Гөлниса — иренә:] Әйҙә, өй эшенең ниндәй ҡыуаныcһыҙ, осо-башы күренмәй торған йән биҙҙергес нәмә икәнен, исмаһам, һин таты!* З. Биишева.

**ҠЫУАНЫУ** *к.* **1.** Күңел ҡәнәғәтлеге, күңел рәхәтлеге кисереү; шатланыу. *Ҡыуаныp көлөү. Ҡыуаныp ҡаршы алыу.* ■ *Минең уҡыуыма атай-ымдар ҙа ҡыуаныp бөтә алманы.* Т. Йәнәби.

**2.** Сығанаҡ килештәге һүҙҙән һуң килеп, рәхмәт йөҙөнән әйтелгән теләкте белдерә. *Ҡулыңдан ҡыуан.* ■ *Юлығыҙ уңһын, Баһау, Биккол. — Шулай булһын, Фатима, телеңдән ҡыуан.* А. Таһиров.

● *Баланың тыуғанына ҡыуанма, торғанына ҡыуан.* Әйтем.

**ҠЫУАНЫШЫУ** *к. урт. ҡар.* **ҡыуаныу** 1. *Ҡыуанышып күрешеү.*

**ҠЫУАРЫУ** *к.* **1.** Ултырған көйө ҡороп кибеү (үҫемлеккә ҡарата). *Ҡыуарған ағас.* ■ *Яҙын-йәйен баҡса сәскәләнә, көҙө килһә, япраҡ ҡыуара.* С. Кулибай. *Кулдәр, йылғалар ҡороған, үләндәр ҡыуарған.* «Урал батыр». / *күсм.* Төҫһеҙгә әйләнеү, төҫ ҡасыу. *Ҡыҙыл мәтелек өҫтөндә ҡыуарып, .. саң аҫтында тонсоғоп, башҡорт ауылдары ултыра.* Ғ. Дәүләтшин. *Ғәмһеҙ генә йылмайып ултырған Иманбай ҡапыл ағарып, ҡыуарып китте.* В. Нафиҡов.

**2.** Ябығып, кибеп, ҡаҡ һөйәккә ҡалыу. *Биргән генә ерең ер ҙә түгел, ҡыуанманым, әсәй, ҡыуарҙым* (Сеңләүҙән).

**ҠЫУАҪ** [*ғәр.*] *и. диал.* Ҡон, үс. *[Колсобай:] Баланан ҡыуаҫ ҡайтарыу егетлек түгел.* Я. Хамматов.

**ҠЫУАУ** *и.* **1.** Ағастың олонона тояҡ һымаҡ булып сыҡҡан бәшмәк.

**2.** Ҡайындың шундай бәшмәгенән саҡма өсөн яһалған мамыҡ; ҡау. *Ҡыуауға ут сағыу.*

**ҠЫУҒА** *и. ҡар.* **ҡуға.** *Әллә йыр, әллә һыу еле туҙғаҡлы ҡамыштарҙы, ҡыуғаларҙы сайҡалдырҙы.* Х. Ғиләжев. *Туҡ һыуҙары аға дуғалай, Туҡ ҡыҙҙары зифа ҡыуғалай.* К. Мәргән.

**ҠЫУҒАҘАҠ** *с.* **1.** Ауырлығы әҙ; ауыр түгел; еңел. *Ҡыуғаҙаҡ нәмә.*

**2.** *күсм.* Елбәҙәк холоҡло. *[Ляхов:] Мин һеҙҙе былай ҡыуғаҙаҡ булырһығыҙ тип уйламағайным.* Х. Мохтар.

**ҠЫУҒАҘАҠЛЫҠ** *и.* Елбәҙәк холоҡ.— *Был эште яуыз ниәт менән эшләгәнһегеҙ, тип һеҙҙе ғәйепләр өсөн бер дәлилем дә юҡ. Был бары ҡыуғаҙаҡлыҡтан ғына эшләнгән.* Х. Мохтар.

**ҠЫУҒЫЛ** *с.* Ҡыу үлән төҫөндәге аҡһыл һары.

**ҠЫУҒЫН** [1] *и.* Ҡасҡан кешене баҫтырып тотор өсөн арттан төшкән сапҡын. *Ҡыуғын ебәреү. Ҡыуғын төшөрөү.* ■ — *Ҡарнай ағай, ҡасығыҙ! Һәләк булаһығыҙ бит! Йәйләүҙән ҡыуғын килә! .. Уның артынса яҡында ғына ат тояҡтары тупылдаған, ҡыйҡыулап ҡысҡырған тауыштар ишетелгән.* Н. Иҙелбай. *Теге батша Алпамышаның артынан ҡыуғын сығара.* «Алпамыша».

**ҠЫУҒЫН** [2] *и.* **1.** Ағыҙып ҡыуыу өсөн һыуға төшөрөлгән ағас. *Үҙәште йылғаһынан яҙғы ташҡында ҡыуғын ҡыуалар, һал ағыҙалар.* Ж. Кейекбаев.

**2.** Ағас ағыҙыу эше. *Ҡыуғынға төшөү. Ҡыуғынға йөрөү.* ■ *Урман ҡырҡыуҙа, ҡыуғындағы ҡыйынлыҡтар, ауырлыҡтар тураһында күп ишеткәне булһа ла, Йыһаннурҙың ҡыуғында һәм урман эшендә булғаны юҡ ине әле.* Ә. Вәли.— *Иртәгә иртүк ҡыуғынға, ағастарҙы берәмләп ағыҙыу эшенә тотонорға кәрәк!* Ә. Бикчәнтәев.

**ҠЫУҒЫНЛАТЫУ** *к. йөкм. ҡар.* **ҡыуғынлау.** *Ағас ҡыуғынлатыу.*

**ҠЫУҒЫНЛАУ** *к.* Һыуҙан ағыҙып ҡыуҡыу (ағасты). *Был йылғалар ҡыуғынлап, ағас килтереү өсөн бик уңайлы.* М. Хисмәтов.

**ҠЫУҒЫНЛАШЫУ** *к. урт. ҡар.* **ҡыуғынлау.** *Ағас ҡыуғынлашыу.*

**ҠЫУҒЫНСЫ** [1] *и.* Артынан баҫтырып ҡыуа төшкән кеше. *Ҡыуғынсылар Заятүләкте .. аяҡ-ҡулын бәйләп, атаһы Сәмәр ханға алып ҡайта.* «Заятүләк менән Һыуһылыу».

**ҠЫУҒЫНСЫ** [2] *и.* Ағас ағыҙыу эшендәге кеше. *Ҡыуғынсылар үткер багор менән йыуан бүрәнәләргә батырғанса сүкейҙәр ҙә ике яҡлап алға табан һөйрәйҙәр.* М. Тажи.

**ҠЫУҒЫНСЫЛЫҠ** *и.* Ҡыуғын менән ағас ағыҙыу эше.

**ҠЫУҒЫР** *и.* **1.** Көйҙөрөлмәгән ата мал. *Ҡыуғыр тәкә. Ҡыуғыр үгеҙ.*

**2.** *күсм.* Йөрөмтәл, аҙғын. *Ҡыуғыр ир.*

**ҠЫУҘАУ** *к. диал.* Ҡыуалау.

**ҠЫУҘЫРТЫУ** *к. ҡар.* **ҡыуҙырыу.**

**ҠЫУҘЫРЫУ** *к.* **1.** *йөкм. ҡар.* **ҡыуыу.** *Эштән ҡыуҙырыу.*

**2.** Айыртып, ағыҙып алыу. *Бал ҡыуҙырыу.*

**ҠЫУҠЫУЫС** *и.* Аяғы ныҡ артта, бармаҡ араһы ярыһыҙ сумғыс өйрәк.

**ҠЫУЛАУ** *и.* **1.** Яҡтыртыу өсөн ыҫмалалы таяҡ башына тоҡандырылған ут.

**2.** *диал.* Төтәткес.

**ҠЫУЛЫҠ** *и.* **1.** Беренсе тапҡыр ҡолонлаған йәш бейә. *Ҡыулыҡ балаһы ҡоласайҙан ат тыуырын белмәнем* (Ҡобайырҙан).

**2.** Тәүге ҡолон.

**ҠЫУРАТЫУ** *к.* Ҡояшта, эҫелә оҙаҡ тотоп, ныҡ киптереү, ныҡ ҡоротоу. *Бесәнде ҡыуратмай йыйып алыу.*

**ҠЫУРАУ** *к.* Ҡояшта, эҫелә оҙаҡ тороп, ныҡ кибеү, ныҡ ҡороу. *Бесән ҡыурап киткән, шауҙырлап тора.*

**ҠЫУТОМШОҠ** *с. һөйл.* Ҡараусыһыҙ, меҫкен хәлендә (балаларға ҡарата әйтелә). *Ҡыутомшоҡ булыу.*

**ҠЫУЫҠ** *и.* **1.** *анат.* Кеше йәки хайуандарҙа эсе ҡыуыш тоҡсай һымаҡ бәүел йыйыла торған эске ағза.

**2.** Балыҡтың һауа менән тулы эске ағзаһы. *Балыҡтың ҡыуығы ҡыҫыла һәм киңәйә ала.*

**3.** Һауа йәки берәй төрлө газ тулған үтә күренмәле шар. *Һабын ҡыуығы.* ■ *Һауаһы сығарылған ҡыуыҡ кеүек, беҙҙең быуындар ҡапыл бушаны.* Д. Юлтый.

**4.** Шәмдең утын ҡаплап торған эсе ҡыуыш быяла. *Ҡыуыҡлы шәм.* ■ *Мейес киртләсендә ҡыуығы ҡоромланған шәм төтәп ултыра.* Ғ. Ғүмәр. *Әсәһе филтәһен юғарыраҡ күтәргәйне, шәм һөрөмләнеп яңа башланы, өйгә кәрәсин, филтә еҫе таралды.— Һаклап ҡына тотонған ҡыуығым да былтыр ҡыш ватылып ҡуйҙы шул, хәйерһеҙ.* Н. Мусин.

**5.** *күсм.* Етди булмаған, рухи яҡтан сикләнгән; буш (кешегә ҡарата). *[Хәтмулла:] Аҡыллы ағай-эне әйтә торғайны шул һине пустой бәндә, йәғни ҡыуыҡ тип, хаҡ һүҙ икән.* З. Ғәлимов.

♦ **Буш ҡыуыҡ** юҡҡа ғына маҡтанған кешегә әйтелә. **Буш** (*йәки* **ел**) **ҡыуыҡ осороу** ялған, буш хәбәр һөйләү. *Ул [Әпкәләй] һүҙе менән кешене арбарға, буш ҡыуыҡ осорорға тиһәң — беренсе әҙәм.* Ғ. Хөсәйенов. **Ҡырҡ ҡыуыҡ** *диал.* бойлоҡһоҙ. **Ҡыуыҡ баш** *ҡар.* **баш** 2. **Үт ҡыуығы** *анат.* үт йыйыла торған эске ағза.

**ҠЫУЫҠЛАНДЫРЫУ** *к.* Ҡыуыҡ[3] хәленә килтереү, ҡыуыҡ һымаҡ итеү. *Һабын күбеген ҡыуыҡландырыу.*

**ҠЫУЫҠЛАНЫУ** *к.* Ҡыуыҡ (3 мәғ.) хәленә килеү, ҡыуыҡ хәлендә булыу.

**ҠЫУЫҠСА** *и.* Эсендә һауа булған ваҡ ҡына ҡыуыҡ.

**ҠЫУЫЛЫУ** *к. төш. ҡар.* **ҡыуыу** 1—2, 4, 6—9. *Шәһит менән Зыя мәҙрәсәнән ҡыуылды.* Ф. Иҫәнғолов.

♦ **Бер сыбыҡтан ҡыуылған** *ҡар.* **сыбыҡ.**

**ҠЫУЫН** *с.* Ҡыуып алып барылған (малға ҡарата). *Ҡыуын йылҡы. Ҡыуын мал.*

**ҠЫУЫУ** *к.* **1.** Бер ерҙән йәки яндан китергә талап итеү; ҡыуалау. *Ҡыуып ебәреү. Ҡыуып ҡайтарыу.* ■ *— Кит әле бынан! Һин нимә беләһең! — тинеләр, ҡыуып ебәрҙеләр.* С. Агиш. *Бай этте ҡыуа, эт китмәй, өрә лә өрә* (Әкиәттән). / Өшкөтөп, өркөтөп ҡасырыу. *Себен ҡыуыу. Тауыҡтарҙы ҡыуыу.* ■ *Незнайка кәзә емтеге янынан ҡарғаларҙы ҡыуып тора* (Әкиәттән). / Ирекһеҙләп, ҡыҫырыҡлап, китергә мәжбүр итеү. *Ауылдан ҡыуыу. Илдән ҡыуыу. Өйҙән ҡыуыу. Эштән ҡыуыу.* ■ *Атҡа ғына менеп, яуҙы ҡыуған үҙ илендә данлы ир булыр* (Халыҡ йырынан).

**2.** Ашыҡтырып, ҡыҫтап, тиҙләтеү; ҡыуалау. *Тығыҙлап ҡыуыу. Шәп ҡыуыу.* ■ *Прогулкала йөрөгәндә, лос та лос тип ҡыуалар* (Бәйеттән).

**3.** Кем йәки ниҙер артынан тиҙләтеп барыу. *Ҡыуып үтеү.* ■ *— Тояғы ергә теймәгән, ел дә ҡыуып етмәгән .. Аҡбуҙатың бир, һылыу.* «Аҡбуҙат».

**4.** Кем йәки ниҙелер тотор өсөн артынан йәһәтләп барыу; баҫтырыу. *Арттан ҡыуыу. Бүре ҡыуыу. Ҡыуа сығыу. Ҡыуа төшөү. Ҡыуып тотоу.* ■ *[Бәгиҙә:] Ҡасам тинем — ҡастым. Ата-ата ҡыуҙылар — тота алманылар.* И. Ғиззәтуллин.

**5.** Нимәгәлер ынтылыу. *Байлыҡ артынан ҡыуыу. Дан артынан ҡыуыу. Мал артынан ҡыуыу. Нәсне ҡыуыу.* ■ *Берәү йәшәй йәшен булып, берәү донъя ҡыуа ҡалтырап.* В. Әхмәҙиев.

**6.** Әйләп алып барыу; ҡыуалау. *Малды көтөүгә ҡыуыу. Үрешкә ҡыуыу. Яланға ҡыуыу.* ■ *Һыйырын ҡыуырға һуңлаған бер бисә ҡыҙыл туҡалды сыбыҡлай-сыбыҡлай йүгерҙе.* Ә. Вәли. *Тугайҙа кемдер йырлай, һыҙғырып мал ҡыуалар. Улар йылҡы ҡыуып килә-килә арып та, йыбанып та, асығып та бөткән.* Һ. Дәүләтшина. / Билдәле бер йүнәлештә күпләп күсереү. *Бүрәнә ҡыуыу. Эшелонды ҡыуыу.* ■ *Аҡбулат ҡарт гүмер буйы ағас ырҡкан да ҡыуғын ҡыуған* (Әкиәттән).

**7.** Ҡайҙалыр ирекһеҙләп, көсләп оҙатыу. *Хеҙмәткә ҡыуыу. Эшкә ҡыуыу.* ■ *Аҫыл да аҫыл ҡыҙҙарҙы ҡол итеп, ситкә ҡыуҙылар.* Салауат Юлаев.

**8.** Ниҙер үтә көс менән үткәреү. *Ҡаҙан эсенә резина эсәктән һауа ҡыуыу.*

**9.** *ҡар.* **ҡыуҙырыу** 2. *Бал ҡыуыу. Дегет ҡыуыу.*

**10.** *күсм.* Нисәлер йәште йәшәй башлау.— *Етмеш тугыҙҙы ҡыуам инде, аллаға шөкөр.* Ж. Кейекбаев.

**11.** *күсм.* Ниҙелер башланғыс итеп, өҙмәй дауам итеү. *Ғәҙәтте ҡыуыу. Затты ҡыуыу. Иҫке йоланы ҡыуыу.*

♦ **Ат ҡыуыу** *ҡар.* **ат** [1]. **Ел ҡыуыу** эшһеҙ йөрөү. *Ел ҡыуып, күккә ҡарап, үткән ғүмерҙе белмәнем.* Ш. Бабич. **Урам ҡыуыу** *шул уҡ* **урам тапау** (*ҡар.* **тапау**[1]).

● *Атанан бала тыуһа ине, ата юлын ҡыуһа ине.* Мәҡәл. *Атты сыбырткы менән ҡыума, һоло менән ҡыу.* Әйтем. *Көткән көтөп ала алмаҫ, ҡалған ҡыуып етә алмаҫ.* Әйтем. *Ҡурҡаҡты күп ҡыуһаң, батырға әйләнә.* Әйтем. *Саҡырғанға бар, ҡыуғандан кит.* Әйтем. *Уңмаған юлды ҡыума.* Мәҡәл.

**ҠЫУЫШ** *и.* **1.** Ергә лыпын ултыртылған ҡыйыҡ рәүешендәге ваҡытлы торлаҡ. *Ҡабыҡ ҡыуыш. Һалам ҡыуыш. Ҡыуыш ауыҙы. Ҡыуыш башы. Ҡыуыш ҡороу.* ■ *[Шафиҡ] ҡайынға иҫке кәбән тағандарын терәне. Өҫтөн япраҡлы ботаҡ менән ҡаплап, ҡыуыш яһаны.* Я. Хамматов.

**2.** Ниҙәндер эсендә өңөлөп торған тишек. *Кәбән ҡыуышы.* ■ *Баҡсалағы бер ҡарт ағас ҡыуышында себен турғайы балалары сипылдаша.* Ф. Рәхимғолова. *Батырҙар ҡарт юғалған урынды барып ҡараһа, бер ҙур ҡыуыш барлығын күрә. Ләкин был ҡыуыш тауҙы тup-туры өңөп, төшөп киткән* (Әкиәттән).

**ҠЫУЫШЛАНЫУ** *к.* Эсе ҡыуыш хәлгә килеү. *Тау тоҡомдары иреп, ҡыуышлана.*

**ҠЫУЫШЛАУ** *к.* Ҡыуыш (1 мәғ.) ҡороу. *Еҙбикә әбей үҙ сабынлығында ҡыуышлап ятҡан* (Хикәйәттән).

**ҠЫУЫШЛЫҠ** *и.* **1.** Нимәнеңдер эсендә өңөлөп, ҡыуыш булып торған урын. *Тау ҡыуышлығы.* ■ *Һыу гипс тоҡомдарын иретә лә ер аҫтында төрлө ҙурлыҡтағы ҡыуышлыҡтар яһала.* Д. Бураҡаев.

**2.** Тере организмда булған бушлыҡ йәки төрлө ағзалар урынлашҡан урын. *Ауыҙ ҡыуышлығы. Күкрәк ҡыуышлығы. Ҡорһаҡ ҡыуышлығы.*

**ҠЫУЫШМА** *с. диал.* Кенәсел.

**ҠЫУЫШЫУ** *к.* **1.** *урт. ярҙамл. ҡар.* **ҡыуыу** 1—4, 6, 9. *Мал ҡыуышыу.*

**2.** Уҙып, үтеп китергә тырышып йүгерешеү; уҙышыу. *Кешеләр уҙамандан ҡыуышып, ут сыҡ-*

**3.** Һауа йәки берәй төрлө газ тулған үтә күренмәле шар. *Һабын ҡыуығы.* ■ *Һауаһы сығарылған ҡыуыҡ кеүек, беҙҙең быуындар ҡапыл бушаны.* Д. Юлтый.

**4.** Шәмдең утын ҡаплап торған эсе ҡыуыш быяла. *Ҡыуыҡлы шәм.* ■ *Мейес киртләсендә ҡыуығы коромланған шәм төтәп ултыра.* Ғ. Ғүмәр. *Әсәһе филтәһен юғарыраҡ күтәргәйне, шәм һөрөмләнеп яна башланы, өйгә кәрәсин, филтә еҫе таралды.— Һаҡлап ҡына тотонған ҡыуығым да былтыр ҡыш ватылып ҡуйҙы шул, хәйерһеҙ.* Н. Мусин.

**5.** *күсм.* Етди булмаған, рухи яҡтан сикләнгән; буш (кешегә ҡарата). *[Хәтмулла:] Аҡыллы ағай--эне әйтә торғайны шул һине пустой бәндә, йәғни ҡыуыҡ тип, хаҡ һүҙ икән.* З. Ғәлимов.

♦ **Буш ҡыуыҡ** юҡҡа ғына маҡтанған кешегә әйтелә. **Буш** (*йәки* **ел**) **ҡыуыҡ осороу** ялған, буш хәбәр һөйләү. *Ул [Әпкәләй] һүҙе менән кешене арбарға, буш ҡыуыҡ осорорға тиһәң — беренсе әҙәм.* Ғ. Хөсәйенов. **Ҡырҡ ҡыуыҡ** *диал.* бойлоҡһоҙ. **Ҡыуыҡ баш** *ҡар.* **баш 2.** **Үт ҡыуығы** *анат.* үт йыйыла торған эске ағза.

**ҠЫУЫҠЛАНДЫРЫУ** *ҡ.* Ҡыуыҡ[3] хәленә килтереү, ҡыуыҡ һымаҡ итеү. *Һабын күбеген ҡыуыҡландырыу.*

**ҠЫУЫҠЛАНЫУ** *ҡ.* Ҡыуыҡ (3 мәғ.) хәленә килеү, ҡыуыҡ хәлендә булыу.

**ҠЫУЫҠСА** *и.* Эсендә һауа булған ваҡ ҡына ҡыуыҡ.

**ҠЫУЫЛЫУ** *ҡ. төш. ҡар.* **ҡыуыу** 1—2, 4, 6—9. *Шәһит менән Зыя мәҙрәсәнән ҡыуылды.* Ф. Иҫәнғолов.

♦ **Бер сыбыҡтан ҡыуылған** *ҡар.* **сыбыҡ.**

**ҠЫУЫН** *с.* Ҡыуып алып барылған (малға ҡарата). *Ҡыуын йылҡы. Ҡыуын мал.*

**ҠЫУЫУ** *ҡ.* **1.** Бер ерҙән йәки яндан китергә талап итеү; ҡыуалау. *Ҡыуып ебәреү. Ҡыуып ҡайтарыу.* ■ *— Кит әле бынан! Һин нимә беләһең! — тинеләр, ҡыуып ебәрҙеләр.* С. Агиш. *Бай этте ҡыуа, эт китмәй, өрә лә өрә* (Әкиәттән). / Өшкөтөп, өркөтөп ҡасырыу. *Себен ҡыуыу. Тауыҡтарҙы ҡыуыу.* ■ *Незнайка кәзә емтеге янынан ҡарғаларҙы ҡыуып тора* (Әкиәттән). / Ирекһеҙләп, ҡыҫырыҡлап, китергә мәжбүр итеү. *Ауылдан ҡыуыу. Илдән ҡыуыу. Өйҙән ҡыуыу. Эштән ҡыуыу.* ■ *Атҡа ғына менеп, яуҙы ҡыуған үҙ илендә данлы ир булыр* (Халыҡ йырынан).

**2.** Ашыҡтырып, ҡыҫтап, тиҙләтеү; ҡыуалау. *Тығыҙлап ҡыуыу. Шәп ҡыуыу.* ■ *Прогулкала йөрөгәндә, лос та лос тип ҡыуалар* (Бәйеттән).

**3.** Кем йәки ниҙер артынан тиҙләтеп барыу. *Ҡыуып үтеү.* ■ *— Тояғы ергә теймәгән, ел дә ҡыуып етмәгән .. Аҡбуҙатың бир, һылыу.* «Аҡбуҙат».

**4.** Кем йәки ниҙелер тотор өсөн артынан йәһәтләп барыу; баҫтырыу. *Арттан ҡыуыу. Бүре ҡыуыу. Ҡыуа сығыу. Ҡыуа төшөү. Ҡыуып тотоу.* ■ *[Бәгиҙә:] Ҡасам тинем — ҡастым. Ата-ата ҡыуҙылар — тота алманылар.* И. Ғиззәтуллин.

**5.** Нимәгәлер ынтылыу. *Байлыҡ артынан ҡыуыу. Дан артынан ҡыуыу. Мал артынан ҡыуыу. Нәпсене ҡыуыу.* ■ *Берәү йәшәй йәшен булып, берәү донъя ҡыуа ҡалтырап.* В. Әхмәҙиев.

**6.** Әйләп алып барыу; ҡыуалау. *Малды көтөүгә ҡыуыу. Үрешкә ҡыуыу. Яланға ҡыуыу.* ■ *Һыйырын ҡыуырға һуңлаған бер бисә ҡыҙыл туҡалды сыбыҡлай-сыбыҡлай йүгерҙе.* Ә. Вәли. *Туғайҙа кемдер йырлай, һыҙғырып мал ҡыуалар. Улар йылҡы ҡыуып килә-килә арып та, йыбанып та, асығып та бөткән.* Һ. Дәүләтшина. / Билдәле бер йүнәлештә күпләп күсереү. *Бүрәнә ҡыуыу. Эшелонды ҡыуыу.* ■ *Аҡбулат ҡарт ғүмер буйы ағас ҡырҡҡан да ҡыуғын ҡыуған* (Әкиәттән).

**7.** Ҡайҙалыр ирекһеҙләп, көсләп оҙатыу. *Хеҙмәткә ҡыуыу. Эшкә ҡыуыу.* ■ *Аҫыл да аҫыл ҡыҙҙарҙы ҡол итеп, ситкә ҡыуҙылар.* Салауат Юлаев.

**8.** Ниҙер үтә көс менән үткәреү. *Ҡаҙан эсенә резина эсәктән һауа ҡыуыу.*

**9.** *ҡар.* **ҡыуҙырыу 2.** *Бал ҡыуыу. Дегет ҡыуыу.*

**10.** *күсм.* Нисәлер йәште йәшәй башлау.— *Етмеш туғыҙҙы ҡыуам инде, аллаға шөкөр.* Ж. Кейекбаев.

**11.** *күсм.* Ниҙелер башланғыс итеп, өҙмәй дауам итеү. *Ғәҙәтте ҡыуыу. Затты ҡыуыу. Иҫке йоланы ҡыуыу.*

♦ **Ат ҡыуыу** *ҡар.* **ат**[1]. **Ел ҡыуыу** эшһеҙ йөрөү. *Ел ҡыуып, күккә ҡарап, үткән ғүмерҙе белмәнем.* Ш. Бабич. **Урам ҡыуыу** *шул уҡ* **урам тапау** (*ҡар.* **тапау**[1]).

● *Атанан бала тыуһа ине, ата юлын ҡыуһа ине.* Мәҡәл. *Атты сыбыртҡы менән ҡыума, һоло менән ҡыу.* Әйтем. *Көткән көтөп ала алмаҫ, ҡалған ҡыуып етә алмаҫ.* Әйтем. *Ҡурҡаҡты күп ҡыуһаң, батырға әйләнә.* Әйтем. *Саҡырғанға бар, ҡыуғандан кит.* Әйтем. *Уңмаған юлды ҡыума.* Мәҡәл.

**ҠЫУЫШ** *и.* **1.** Ергә лыпын ултыртылған ҡыйыҡ рәүешендәге ваҡытлы торлаҡ. *Ҡабыҡ ҡыуыш. Һалам ҡыуыш. Ҡыуыш ауыҙы. Ҡыуыш башы. Ҡыуыш ҡороу.* ■ *[Шафиҡ] ҡайынға иҫке кәбән тағандарын терәне. Өҫтөн япраҡлы ботаҡ менән ҡаплап, ҡыуыш яһаны.* Я. Хамматов.

**2.** Ниҙеңдәр эсендә өңөлөп торған тишек. *Кәбән ҡыуышы.* ■ *Баҡсалағы бер ҡарт ағас ҡыуышында себен турғайы балалары сипылдаша.* Ф. Рәхимғолова. *Батырҙар ҡарт юғалған урынды барып ҡараһа, бер ҙур ҡыуыш барлығын күрә. Ләкин был ҡыуыш тауҙы туп-туры өңөп, төшөп киткән* (Әкиәттән).

**ҠЫУЫШЛАНЫУ** *ҡ.* Эсе ҡыуыш хәлгә килеү. *Тау тоҡомдары иреп, ҡыуышлана.*

**ҠЫУЫШЛАУ** *ҡ.* Ҡыуыш (1 мәғ.) ҡороу. *Еҙбикә әбей үҙ сабынлығында ҡыуышлап ятҡан* (Хикәйәттән).

**ҠЫУЫШЛЫҠ** *и.* **1.** Нимәнеңдер эсендә өңөлөп, ҡыуыш булып торған урын. *Тау ҡыуышлығы.* ■ *Һыу гипс тоҡомдарын иретә лә ер аҫтында төрлө ҙурлыҡтағы ҡыуышлыҡтар яһала.* Д. Бураҡаев.

**2.** Тере организмда булған бушлыҡ йәки төрлө ағзалар урынлашҡан урын. *Ауыҙ ҡыуышлығы. Күкрәк ҡыуышлығы. Ҡорһаҡ ҡыуышлығы.*

**ҠЫУЫШМА** *с. диал.* Кенәсел.

**ҠЫУЫШЫУ** *ҡ.* **1.** *урт. ярҙамл. ҡар.* **ҡыуыу** 1—4, 6, 9. *Мал ҡыуышыу.*

**2.** Уҙып, үтеп китергә тырышып йүгерешеү; уҙышыу. *Кешеләр уҙамандан ҡыуышып, ут сыҡ-*

*кан якка йүгерешә башланы.* Ғ. Дәүләтшин. *Агиҙелдән пароход килә, кыуышып һалдар менән* (Халыҡ йырынан). / Бер-берендә тоторға йүгерешеү; баҫтырышыу. *Ҡыуышып уйнау.*

**ҠЫХ** *окш.* **1.** Ҡаҡырғанда сыҡҡан тауышты белдергән һүҙ.

**2.** *бал.* Ҡырҡыуҙы белдергән һүҙ. *Кулды кых итеү. Теймә бысакка, кых була.*

**ҠЫХАЙ** *с. бал.* Бысраҡ. *Теймә, кыхай!*

**ҠЫХ-ҠЫХ** *окш.* **1.** Ҡабат-ҡабат ҡаҡырған тауышты белдергән һүҙ. *Кайныһы, мин шәп кеше тип, яр башынан акыра, кайныһы кых-кых итеп, аҙбар башынан какыра.* Ш. Бабич.

**2.** *бал.* Ҡырҡыуҙы белдергән һүҙ. *Куй, кулың кых-кых була.*

**3.** Тамаҡ төбө менән көлгән тауышты белдергән һүҙ; ҡыһ-ҡыһ. *Әй, мөсәххих, көлмә кых-кых тиргәүемә, ауырткан урыныңды тырнауыма.* Ш. Бабич.

**ҠЫҺ-ҠЫҺ** *окш.* Тамаҡ төбө менән көлгән тауышты белдергән һүҙ; ҡых-ҡых. *Кыһ-кыһ көлөү.*

**ҠЫҺЫТЛЫҠ** [*гәр.*] *и. диал.* Ҡытлыҡ.

**ҠЫШ** *и.* Йылдың көҙ менән яҙ араһындағы иң һыуыҡ ваҡыты. *Кыш айҙары. Кыш көнө. Кыш уртаһы. Кыш сығыу.* ■ *Кыштың сонтор айы февраль дә килеп етте. Тышта куҙ аскыһыҙ епшек, һырма буран.* Ғ. Дәүләтшин. *Ыжғыр буранлы, шартлап торған селләле кыш килде.* Ф. Иҫәнғолов. *Кыш үтеп, яҙ айҙары килһә, керәм шул баксаға.* Ш. Бабич.

♦ **Ҡыш бабай** *кар.* **бабай.**

**ҠЫШҠЫ** *с.* **1.** Ҡыш көнөндәге, ҡышҡа хас. *Кышкы кис. Кышкы һыуык.* ■ *Кышкы кояш көлөп торһа ла йылыһы юк.* Ш. Янбаев. *Ул [Зыя] саңғы менән кышкы кыҫка көндө бер караңғынан икенсе караңғыға саклы тауҙар, урмандар араһында йөрөнө.* М. Тажи.

**2.** Ҡыш өсөн тәғәйенләнгән, ҡышын файҙаланыла торған. *Кышкы кейем.* ■ *Беҙ блиндажға караныҡ. Хәҙер кышкы окоп түгел. Бөтөнләй башка. Окоптар тәрән кыҙылған, блиндаждар нык эшләнгән, эсе коро һәм иркен.* Д. Юлтый.

● *Кышкы көн бер тотам.* Мәҡәл.

**ҠЫШҠЫЛЫҠ** *и.* Ҡышҡы көн, ҡышҡы ваҡыт. *Кышкылыкка аҙык әҙерләү.* ■ *Сентябрь айында корттар ғаилә яғынан берләштерелеп, кышкылыкка ике корпуска йыйыла.* З. Байбурин.

**ҠЫШҠЫҺЫН** *р.* Ҡыш көнө; ҡышын. *Йылғалар кышкыһын туңа.*

**ҠЫШЛАҠ** *и.* Урта Азиялағы ауыл.

**ҠЫШЛАТЫЛЫУ** *к. төш. кар.* **ҡышлатыу.** *Кышлатылған мал.*

**ҠЫШЛАТЫУ** *к.* Ҡыш аҫрап сығарыу. *Мал кышлатыу.* ■ *[Шәрги:] Бер һәүкәште кышлатырмын әле нисек тә, эҫкерт төптәрен йыйып ашатырмын.* Я. Вәлиев.

**ҠЫШЛАУ** [1] *к.* **1.** Ҡышҡылыҡҡа урынлашыу. *Унда [өңдә] көҙҙән кышлап калған айыу ята имеш.* Т. Хәйбуллин.

**2.** Ҡыш миҙгелен үткәреү, ҡыш сығыу. *Йәйгенәһен бында йәйләгәйнем, кышкынаһын кайҙа кышлайым* (Халыҡ йырынан).

**ҠЫШЛАУ** [2] *и.* Ҡыш йәшәй торған урын; ҡышҡы йорт. *Кышлау умартаһы. Кышлауға кайтыу.* ■ *Малай кышлауға килеп, индеккә атын бәйләне лә алтын ашығын алырға өйгә инде, ти* (Әкиәттән).

**ҠЫШЛАУ** [3] *с.* Ҡыш сыҡҡан, ҡыш ҡышлаған. *Кышлау бал. Кышлау кәбән. Кышлау үгеҙ.*

**ҠЫШЛАУЫҠ** *и.* Умарта ҡышлата торған йылы урын; умарта баҙы. *Куп кенә умарталыктарҙа умарталар, кышлауыктар етешмәй.* «Совет Башҡортостаны», 1985, 21 сентябрь.

**ҠЫШЛЫҠ** [1] *с.* Бер ҡышҡа етерлек. *Кышлык бесән. Кышлык утын әҙерләү.*

**ҠЫШЛЫҠ** [2] *и.* Ҡышҡы һыуыҡҡа булған сыҙамлыҡ. *Бер ҙә кышлыгың юк, өшөйһөң дә йөрөйһөң.*

**ҠЫШЛЫҠ** [3] *и.* Маңҡа ауырыулы аттың танауынан аҡҡан лайла.

**ҠЫШЛЫҠЛАУ** *к.* Маңҡаға, ҡышлыҡлыға әйләнеү; ҡышлыҡлы булыу. *Кышлыклап йөрөгән ат.*

**ҠЫШЛЫҠЛЫ** *с.* Ҡышын бирешмәй торған, ҡышҡы һыуыҡҡа сыҙамлы. *Кышлыклы кеше. Кышлыклы мал. Кышлыклы булыу.*

**ҠЫШЛЫҠҺЫҘ** *с.* Ҡышҡы һыуыҡҡа сыҙамһыҙ; өшөмтәл. *Кышлыкһыҙ кеше. Кышлыкһыҙ мал. Кышлыкһыҙ булыу.*

**ҠЫШТЫҠ** *и.* Оҙаҡ йыуынмаған кешенең тәненә ҡабырсыҡланып ҡатҡан ҡауаҡ, кер.

**ҠЫШТЫҠЛАУ** *к.* Ҡабырсыҡланып, ҡыштыҡ менән ҡапланыу.

**ҠЫШТЫР** *окш.* Ҡатҡыл, йоҡа нәмә ҡуҙғалғанда һ. б. сыҡҡан тауышты белдергән һүҙ. *Кыштыр итеү.*

**ҠЫШТЫР-ҠЫШТЫР** *окш.* Ҡабат-ҡабат ҡыштыр иткән тауышты белдергән һүҙ. *Кыштыр-кыштыр итеү. Кыштыр-кыштыр килеү.* ■ *Баҫкан һайын миңә кыштыр-кыштыр ниҙер һөйләй кеүек һәр япрак.* Н. Нәжми.

**ҠЫШТЫРЛАҠ** *с.* Ҡыштыр-ҡыштыр итеүсән. *Кыштырлак плащ.*

**ҠЫШТЫРЛАТЫУ** *к.* Ҡыштыр-ҡыштыр иттереү. *Кағыҙ кыштырлатыу.* ■ *Ишмәмәттең аты киске туңғакты кыштырлатып, Әхмәҙулла муллаһың йортонан сығып китте.* А. Карнай.

**ҠЫШТЫРЛАУ** *к.* Ҡыштыр-ҡыштыр итеү. *Кағыҙ кыштырлай.* ■ *Һукмакка койолған япрактар аяк баҫкан һайын кыштырлай.* Б. Хәсән. *Килеүсе, ишек тоткаһын һәрмәп таба алмай, оҙак кына кыштырланы.* Ф. Иҫәнғолов.

**ҠЫШТЫРЛАШЫУ** *к. урт. кар.* **ҡыштырлау.** *Кыштырлаша уклы камыштар.* Р. Ғарипов.

**ҠЫШЫН** *р.* Ҡыш көнө; ҡышҡыһын. *Кышын саңғыла йөрөү.*

**ҠЫШЫР** [*гәр.*] *и. иҫк. кит.* Ҡабыҡ. *Әфлисун араһында һин бер кишер,.. заһирға горурланған һин бер кышыр.* Аҡмулла.

**ҠЫЯ** *с.* Тура йүнәлештән ситкә ауышлы, ситкә тайпылышлы. *Кыя биҙәк Кыя һыҙык. // Кыя һыҙыу. Сәсте кыя тарау. Кыя булыу. Кыя итеү.* ■ *Куп тә үтмәне, кыя һуктырып, ямғыр яуа башланы.* З. Хисмәтуллин.

**ҠЫЯБАШ** *и. диал. кар.* **сүрәкә** [2].

**ҠЫЯҘ** *и. кар.* **ҡаяҙ.**

**ҠЫЯҠ** [1] *и.* **1.** Бик йоҡа тәңкә. *Кыяк тағыу. Кыяк тағылған хәситә.*

**2.** *диал. кар.* **бетеү** 2.

*ҡан яҡҡа йүгерешә башланы.* Ғ. Дәүләтшин. *Агиҙелдән пароход килә, ҡыуышып һалдар менән* (Халыҡ йырынан). / Бер-береңде тоторға йүгерешеү; баҫтырышыу. *Ҡыуышып уйнау.*

**ҠЫХ** *оҡш.* **1.** Ҡаҡырғанда сыҡҡан тауышты белдергән һүҙ.

**2.** *бал.* Ҡырҡыуҙы белдергән һүҙ. *Ҡулды ҡых итеү. Теймә бысаҡҡа, ҡых була.*

**ҠЫХАЙ** *с. бал.* Бысраҡ. *Теймә, ҡыхай!*

**ҠЫХ-ҠЫХ** *оҡш.* **1.** Ҡабат-ҡабат ҡаҡырған тауышты белдергән һүҙ. *Ҡайныһы, мин шәп кеше тип, яр башынан аҡыра, ҡайныһы ҡых-ҡых итеп, аҙбар башынан ҡаҡыра.* Ш. Бабич.

**2.** *бал.* Ҡырҡыуҙы белдергән һүҙ. *Ҡуй, ҡулың ҡых-ҡых була.*

**3.** Тамаҡ төбө менән көлгән тауышты белдергән һүҙ; ҡыһ-ҡыһ. *Әй, мөсәххих, көлмә ҡых-ҡых тирғәүемә, ауыртҡан урыныңды тырнауыма.* Ш. Бабич.

**ҠЫҺ-ҠЫҺ** *оҡш.* Тамаҡ төбө менән көлгән тауышты белдергән һүҙ; ҡых-ҡых. *Ҡыһ-ҡыһ көлөү.*

**ҠЫҺЫТЛЫҠ** [*гәр.*] *и. диал.* Ҡытлыҡ.

**ҠЫШ** *и.* Йылдың көҙ менән яҙ араһындағы иң һыуыҡ ваҡыты. *Ҡыш айҙары. Ҡыш көнө. Ҡыш уртаһы. Ҡыш сығыу.* ■ *Ҡыштың сонтор айы февраль дә килеп етте. Тышта ҡуҙ аҫҡыһыҙ епшек, һырма буран.* Ғ. Дәүләтшин. *Ыжғыр буранлы, шартлап торған селләле ҡыш килде.* Ф. Иҫәнғолов. *Ҡыш үтеп, яҙ айҙары килһә, кәрәм шул баҡсаға.* Ш. Бабич.

◆ **Ҡыш бабай** *ҡар.* **бабай.**

**ҠЫШҠЫ** *с.* **1.** Ҡыш көнөндәге, ҡышҡа хас. *Ҡышҡы кис. Ҡышҡы һыуыҡ.* ■ *Ҡышҡы ҡояш көлөп торһа ла йылыһы юҡ.* Ш. Янбаев. *Ул [Зыя] саңғы менән ҡышҡы ҡыҫҡа көндө бер ҡараңғынан икенсе ҡараңғыға саҡлы тауҙар, урмандар араһында йөрөнө.* М. Тажи.

**2.** Ҡыш өсөн тәғәйенләнгән, ҡышын файҙаланыла торған. *Ҡышҡы кейем.* ■ *Беҙ блиндажға ҡараныҡ. Хәҙер ҡышҡы окоп түгел. Бөтөнләй башҡа. Окоптар тәрән ҡыҙылған, блиндаждар ныҡ эшләнгән, эсе ҡоро һәм иркен.* Д. Юлтый.

● *Ҡышҡы көн бер тотам.* Мәҡәл.

**ҠЫШҠЫЛЫҠ** *и.* Ҡышҡы көн, ҡышҡы ваҡыт. *Ҡышҡылыҡҡа аҙыҡ әҙерләү.* ■ *Сентябрь айында ҡорттар ғаилә яғынан берләштерелеп, ҡышҡылыҡҡа ике корпуска йыйыла.* З. Байбурин.

**ҠЫШҠЫҺЫН** *р.* Ҡыш көнө; ҡышын. *Йылғалар ҡышҡыһын туңа.*

**ҠЫШЛАҠ** *и.* Урта Азиялағы ауыл.

**ҠЫШЛАТЫЛЫУ** *к. төш. ҡар.* **ҡышлатыу.** *Ҡышлатылған мал.*

**ҠЫШЛАТЫУ** *к.* Ҡыш аҫрап сығарыу. *Мал ҡышлатыу.* ■ *[Шәрғи:] Бер һәүкәште ҡышлатырмын әле нисек тә, әҫкерт төптәрен йыйып ашатырмын.* Я. Вәлиев.

**ҠЫШЛАУ** [1] *к.* **1.** Ҡышҡылыҡҡа урынлашыу. *Унда [өңдә] көҙҙән ҡышлап ҡалған айыу ята имеш.* Т. Хәйбуллин.

**2.** Ҡыш миҙгелен үткәреү, ҡыш сығыу. *Йәйгенәһен бында йәйләгәйнем, ҡышҡынаһын ҡайҙа ҡышлайым* (Халыҡ йырынан).

**ҠЫШЛАУ** [2] *и.* Ҡыш йәшәй торған урын; ҡышҡы йорт. *Ҡышлау умартаһы. Ҡышлауға ҡайтыу.* ■ *Малай ҡышлауға килеп, индеккә атын бәйләне лә алтын ашығын алырға өйгә инде, ти* (Әкиәттән).

**ҠЫШЛАУ** [3] *с.* Ҡыш сыҡҡан, ҡыш ҡышлаған. *Ҡышлау бал. Ҡышлау кәбән. Ҡышлау үгеҙ.*

**ҠЫШЛАУЫҠ** *и.* Умарта ҡышлата торған йылы урын; умарта баҙы. *Күп кенә умарталыҡтарҙа умарталар, ҡышлауыҡтар етешмәй.* «Совет Башҡортостаны», 1985, 21 сентябрь.

**ҠЫШЛЫҠ** [1] *с.* Бер ҡышҡа етерлек. *Ҡышлыҡ бесән. Ҡышлыҡ утын әҙерләү.*

**ҠЫШЛЫҠ** [2] *и.* Ҡышҡы һыуыҡҡа булған сыҙамлыҡ. *Бер ҙә ҡышлығың юҡ, өшөйһөң дә йөрөйһөң.*

**ҠЫШЛЫҠ** [3] *и.* Маңҡа ауырыулы аттың танауынан аҡҡан лайла.

**ҠЫШЛЫҠЛАУ** *к.* Маңҡаға, ҡышлыҡлыға әйләнеү; ҡышлыҡлы булыу. *Ҡышлыҡлап йөрөгән ат.*

**ҠЫШЛЫҠЛЫ** *с.* Ҡышын бирешмәй торған, ҡышҡы һыуыҡҡа сыҙамлы. *Ҡышлыҡлы кеше. Ҡышлыҡлы мал. Ҡышлыҡлы булыу.*

**ҠЫШЛЫҠҺЫҘ** *с.* Ҡышҡы һыуыҡҡа сыҙамһыҙ; өшөмтәл. *Ҡышлыҡһыҙ кеше. Ҡышлыҡһыҙ мал. Ҡышлыҡһыҙ булыу.*

**ҠЫШТЫҠ** *и.* Оҙаҡ йыуынмаған кешенең тәненә ҡабырсыҡланып ҡатҡан ҡауаҡ, кер.

**ҠЫШТЫҠЛАУ** *к.* Ҡабырсыҡланып, ҡыштыҡ менән ҡапланыу.

**ҠЫШТЫР** *оҡш.* Ҡатҡыл, йоҡа нәмә ҡуҙғалғанда һ. б. сыҡҡан тауышты белдергән һүҙ. *Ҡыштыр итеү.*

**ҠЫШТЫР-ҠЫШТЫР** *оҡш.* Ҡабат-ҡабат ҡыштыр иткән тауышты белдергән һүҙ. *Ҡыштыр-ҡыштыр итеү. Ҡыштыр-ҡыштыр килеү.* ■ *Баҫҡан һайын миңә ҡыштыр-ҡыштыр ниҙер һөйләй кеүек һәр япраҡ.* Н. Нәжми.

**ҠЫШТЫРЛАҠ** *с.* Ҡыштыр-ҡыштыр итеүсән. *Ҡыштырлаҡ плащ.*

**ҠЫШТЫРЛАТЫУ** *к.* Ҡыштыр-ҡыштыр иттереү. *Ҡағыҙ ҡыштырлатыу.* ■ *Ишмәмәттең аты киске туңғаҡты ҡыштырлатып, Әхмәҙулла муллаһының йортонан сығып китте.* А. Карнай.

**ҠЫШТЫРЛАУ** *к.* Ҡыштыр-ҡыштыр итеү. *Ҡағыҙ ҡыштырлай.* ■ *Һукмаҡҡа ҡойолған япраҡтар аяҡ баҫҡан һайын ҡыштырлай.* Б. Хәсән. *Килеүсе, ишек тотҡаһын һәрмәп таба алмай, оҙаҡ ҡына ҡыштырланы.* Ф. Иҫәнғолов.

**ҠЫШТЫРЛАШЫУ** *к. урт. ҡар.* **ҡыштырлау.** *Ҡыштырлаша уҡлы ҡамыштар.* Р. Ғарипов.

**ҠЫШЫН** *р.* Ҡыш көнө; ҡышҡыһын. *Ҡышын саңғыла йөрөү.*

**ҠЫШЫР** [*гәр.*] *и. иҫк. кит.* Ҡабыҡ. *Әфлисун араһында һин бер кишер,.. заһирға ғорурланған һин бер ҡышыр.* Аҡмулла.

**ҠЫЯ** *с.* Тура йүнәлештән ситкә ауышлы, ситкә тайпылышлы. *Ҡыя биҙәк Ҡыя һыҙыҡ. // Ҡыя һыҙыу. Сәсте ҡыя тарау. Ҡыя булыу. Ҡыя итеү.* ■ *Күп тә үтмәне, ҡыя һуктырып, ямғыр яуа башланы.* З. Хисмәтуллин.

**ҠЫЯБАШ** *и. диал. ҡар.* **сүрәкә** [2]**.**

**ҠЫЯҘ** *и. ҡар.* **ҡаяҙ.**

**ҠЫЯҠ** [1] *и.* **1.** Бик йоҡа тәңкә. *Ҡыяҡ тағыу. Ҡыяҡ тағылған хәситә.*

**2.** *диал. ҡар.* **бетеү** 2.

**ҠЫЯҠ**[2] *и.* **1.** Тар ғына оҙон үлән япрағы. *Иген ҡыяғы. Күрән ҡыяғы. Үлән ҡыяғы.* ■ *Юл ситендәге ҡурпы ҡыяҡтарында .. ысыҡ бөртөктәре ята.* З. Биишева.

**2.** Ҡош ҡанатының ситке эре ҡауырһыны. *«Оскор» коштоң канат төптәре лә баҙыгырак, ҡыяҡтары ла оҙонораҡ кеүек тойола.* Н. Ҡәрип.

**ҠЫЯҠ**[3] *с. кар.* **ҡыяҡлы 1.** *Ҡыяҡ гөл.*

**ҠЫЯҠЛАНЫУ** *ҡ.* Ҡыяҡ[2] (1 мәғ.) ебәреү. *Ҡыяҡланып үҫеү.*

**ҠЫЯҠЛАП** *р.* Ҡыяҡ[2] (1 мәғ.) рәүешендә. *Ҡыяҡлап ҡырҡыу.*

**ҠЫЯҠЛЫ** *с.* **1.** Ҡыяҡ япраҡлы. *Ҡыяҡлы үлән.*

**2.** *и. мәғ.* **ҡыяҡлылар** *бот.* Япрағы ҡыяҡ рәүешендәге, быуын-быуын көпшә һабаҡлы бер өлөшлө үҫемлектәр ғаиләһе исеме.

**ҠЫЯҠТА** *и. диал. кар.* **ҡыяҡ**[2] 1.

**ҠЫЯЛАҠ**[1] *и. диал.* Ҡәйелтмәк.

**ҠЫЯЛАҠ**[2] *с. диал.* Ҡыялаш.

**ҠЫЯЛАТА** *р.* **1.** Ҡыя хәлдә, ҡыя рәүештә. *Ҡыялата төшкән нур.*

**2.** *күсм.* Кинәйә менән; ситләтеп, уратып. *Ҡыялата әйтеү.*

**ҠЫЯЛАТЫУ** *ҡ.* **1.** Ҡыя хәлгә килтереү; ҡыя итеү. *Ҡыялатып ҡуйыу. Түбәне ҡыялатып ябыу.* / Өсмөйөшләү. *Яулыкты ҡыялатып ябыныу.*

**2.** Ҡыя йүнәлешкә килтереү; ҡыя итеү. *Ҡыялатып атыу. Ҡыялатып ҡарау. Ҡыялатып осоу.* ■ *Өркөп, капыл һулаҡайға ҡыялатып алып китте Ерәнсәй.* Т. Килмөхәмәтов.

**3.** *күсм.* Ситтән уратыу; кинәйәләү. *Ҡыялатып әйтеү.* ■ *[Тимергәле карт] һүҙҙән һүҙ сығарған кеше булып, ҡыялатып, Айбулат тураһында һүҙ асты.* Һ. Дәүләтшина.

**ҠЫЯЛАУ** *ҡ.* **1.** Ҡыя хәлдә итеү; ҡыя итеү. *Ҡыялап бәйләү. Ҡыялап ябыу.*

**2.** Ҡыя йүнәлеш алыу; ҡыя итеү. *Ҡыялап китеү. Ҡыялап яуған ямғыр.* ■ *Һауаларҙан осҡан эй ағылбай ҡыялап та оса, ҡош күрһә* (Халыҡ йырынан).

**ҠЫЯЛАШ** *с.* Ҡара-ҡаршы тормаған, тура түгел, ҡыя йүнәлешле. *Ҡыялаш өйҙәр. // Ҡыялаш ултырыу.*

**ҠЫЯЛҠЫ** *и.* Ығы-зығы килгән буталыш; бола. *Бал ҡыялҡыһы ысын хәл булғанмы, күләмәс кенәме .., ҡыҫҡаһы, халыҡ отолған, ә байҙар отҡан.* Б. Бикбай.

**ҠЫЯЛЫУ** *ҡ.* **1.** Берәй эш менән булыу; маташыу. *[Алсынбай:] Юҡ менән ҡыялаһың, энекәйем. Лутсы үҙеңә оя ҡороп, донъя күтәргә тырыш.* Д. Юлтый. *[Ҡарам:] Ни эшләйһең?! Ҡыялма, ологә китмәҫ элек бар, ысҡын.* Н. Мусин.

**2.** *диал. кар.* **ҡыланыу** 1. *Иҙрис карт .. урамда балалайка дыңғырлатып, ҡыялып йөрөгән бер кеше ине.* З. Биишева.

**ҠЫЯМ** [*ғәр.*] *и.* **1.** *иҫк. кит.* Аяҡ өҫтө торған хәл. *Булма бер ерҙә ҡыям, эй, юҡҡа шатланған ҡуян.* Ш. Бабич.

**2.** *дини* Намаҙҙың аяҡ өҫтө торған хәлдә уҡыла торған өлөшө.

**ҠЫЯН**[1] *с.* Йор һүҙле, үткер, сая. *[Әбей:] Ҡыпсаҡтар ҡыян, һауалы, уҫал халыҡ, тип һөйләй торғайны атайым мәрхүм.* С. Кулибай.

**ҠЫЯН**[2] *с. диал.* Ҡыдан. *Ҡыян ел.*

**ҠЫЯР** [*ғәр.*] *и.* **1.** Ваҡ һары сәскәле, йомшаҡ киртләс япраҡлы, еле һабаҡлы, оҙонса йәшелсәле баҡса үҫемлеге. *Ҡыяр орлоғо.*

**2.** Шул үҫемлектең йәшелсәһе. *Йәш ҡыяр. Тоҙло ҡыяр.* ■ *Эй, мин ауылда ҡыяр урлап тотолғанды һөйләйем әле.* Т. Йәнәби.

♦ **Тиле ҡыяр** ҡыҫҡа, ҡытыршы һабаҡлы, һары сәскәле, ҡыярға оҡшаш ҡумтаһынан ордоғон бөркөп ебәрә торған күп йыллыҡ үлән.

**ҠЫЯРАҠ** *и. диал.* Эт имсәге (*кар.* **имсәк**).

**ҠЫЯРЛАНЫУ** *ҡ.* Ҡыярға тумалыу.

**ҠЫЯС**[1] *с. диал.* Ҡыя.

**ҠЫЯС**[2] [*ғәр.*] *и. иҫк. кит.* **1.** Ике нәмәнең сағыштырылышы.

**2.** Үрнәк, өлгө. *Томан араһында хәүеф-хәтәр күптер, фәрештә фәрештәгә ҡыяс булмай.* Аҡмулла.

□ **Ҡыяс ҡылыу** сағыштырыу, тиңләштереү.

**ҠӘБЕР** [*ғәр.*] *и.* Үлгән кешене ерләр өсөн әҙерләнгән соҡор. *Ҡәбер ҡаҙыу.* / Үлгән кеше ҡуйылған урын. *Ҡәбер бураһы. Ҡәбер ташы.* ■ *Халыҡ Урал батырҙы бик ҙурлап, хөрмәтләп, ҡалҡыуыраҡ бер ергә күмде, шунан һәр кем уның ҡәбере өҫтөнә бер ус тупраҡ һалып сыҡты, ти.* «Урал батыр». **Ҡәбер өҫтө** мәйетте ерләгән ваҡыт. *Ҡәбер өҫтөндә һөйләнгән телмәр.* **Ҡәбер эйәһе булыу** *шул уҡ* гүр **эйәһе булыу** (*кар.* **эйә**). *Ике-өс йыл эсендә бер өй эсенән өс кеше ҡәбер эйәһе булһынсы, ә?* Ж. Кейекбаев. **Шәһиттәр ҡәбере** яуҙа шәһит үлгән күмәк кеше ҡәбере. *Яңынан күрәшкә ант биреп, баш эйҙек шәһиттәр ҡәберенә.* Б. Ишемғол.

♦ **Ҡәбергә тығыу** үлтереү, юҡ итеү. ■ *Көнө-төнө ыҙғыш. Башымды ҡәбергә тығаһығыҙ бит инде.* **Ҡәберең яҡын булмаһын** кемделер бик яманға иҫәпләгәндә әйтелә. *[Әбей:] Тфү!.. Әстәғәфирулла, ундай кешегә ҡәберең яҡын булмаһын, алла һаҡлаһын.* Т. Хәйбуллин. **Ҡәбер төбө** әрләгәндә әйтелә. **Тереләй ҡәбергә тығыу** *шул уҡ* **тереләй гүргә тығыу** *кар.* **тереләй.**

**ҠӘБЕРЛЕК** *и.* Үлгән кешеләрҙе ҡуя торған махсус урын; зыярат. *Халыҡ был ҡәберлектә изге юлда үлгән әүлиәләр ҡәберлеге тип йөрөткән.* Ә. Вахитов.

**ҠӘБИЛ** [*ғәр.*] *и. иҫк. кит.* Төр. *Мөхәммәтсәлим төрлө мәжлес күргән .., Мирсалих Биксура, Салих Күкләшев ҡәбиленән мөдәристәр хозурында яҡшы урын тотҡан.* Р. Фәхретдинов.

**ҠӘБИЛИӘТ** *и. кар.* **ҡабилиәт.**

**ҠӘБИЛӘ** [*ғәр.*] *и.* Бер нисә ырыуҙан тороп, тел һәм ер йәһәтенән бер берәмек булған халыҡ төркөмө. *Ҡәбилә теле. Ҡәбилә тормошо.*

**ҠӘБИЛӘҮИ** [*ғәр.*] *с. иҫк.* Ҡәбиләгә мөнәсәбәтле, ҡәбиләгә бәйле. *Ҡәбиләүи үҙенсәлек.*

**ҠӘБИХ** [*ғәр.*] *с. иҫк. кит.* Ерәнгес, әшәке. *Иблис .. бер ҡәбих эш ҡылды, уныһын яҙмайым.* Ш. Бабич.

**ҠӘБӘХӘТ** [*ғәр.*] *с.* **1.** Бысраҡ, ерәнгес. *[Сәскә:] Ошо ҡәбәхәт кейемдәрегеҙ менән мәжлескә килергә нисек оялманығыҙ?* М. Фәйзи.

**2.** *күсм.* Бик оятһыҙ, әшәке; шаҡшы. *Ҡәбәхәт кеше. Ҡәбәхәт һүҙ.* ■ *[Ғәләү:] Миңә расчет бир, һинең ҡәбәхәт, ялғансы Ҡәмәреңә ҡол булып тороп булмаҫ.* Т. Йәнәби.

**ҠӘБӘХӘТЛЕК** *и.* Оятһыҙ, әшәке эш; шаҡшылыҡ. *Ҡәбәхәтлек эшләү.*

**ҠӘҒБӘ** [*ғәр.*] *и.* **1.** Мәккә ҡалаһындағы ғибәҙәтхана. *Беҙ хәҙер ҡәғбәнде хөрмәт итмәбеҙ, ҡорбан салып.* Д. Юлтый. *Тәңре өйө оло ҡәғбәне ете әйләнеп, яҙығымды йоламын.* «Иҙеүкәй менән Мораҙым». **Ҡәғбә ташы** ҡәғбәнең мосолмандар табына торған ҡара ташы. *Мин тауҙарҙы ҡәғбә ташы итеп табыныр ға әҙер.* Р. Бикбаев.

**2.** *күсм.* Изге күреп, күңел арнаған, табынған нәмә. *Беҙ йырларбыҙ һаман, беҙ көйләрбеҙ ҡәғбә яһап һине, Салауат!* Х. Ғәбитов. *Атай, әсәй, ике күҙем, һеҙ инегеҙ минең ҡәғбәм* (Бәйеттән).

**ҠӘҒБӘТУЛЛА** *и. ҡар.* **ҡәғбә 1.**

**ҠӘДӘМ** [*ғәр.*] *и. иҫк. кит.* **1.** Аяҡ. *Хөрмәтле йортҡа уҙҙәренең бысраҡ ҡәдәмдәрен баҫтылар.* И. Насыри.

**2.** Аҙым.

**ҠӘҘЕР** [*ғәр.*] *и.* **1.** Тормоштағы урын һәм әһәмиәттән килгән баһа. *Аш ҡәҙерен белеү. Донъя ҡәҙерен белеү. Мал ҡәҙерен белеү. Ҡәҙер һаҡлау. Ҡәҙерҙе ебәреү.* ■ *Ҡәҙерҙәре бөткән нәмәләрҙе ергә күмеп, өҫтөн ябалар.* М. Ғафури.

**2.** Баһалауҙан килгән иғтибарлы мөнәсәбәт; хөрмәт. *Ҡәҙер күрһәтеү. Ҡәҙер күреү. Ҡәҙер эйәһе.*

□ **Ҡәҙер итеү** ҡәҙер-хөрмәт күрһәтеү. *[Мәйылбикә:] Киленгә һүҙем юҡ, ҡәҙер итеп тора.* Һ. Дәүләтшина.

● *Бар нәмәнең ҡәҙере юҡ.* Әйтем. *Ир ҡәҙерен ил белер.* Мәҡәл.

**ҠӘҘЕР-ҒИЗЗӘТ** *и. йыйн. ҡар.* **ҡәҙер-хөрмәт.**

**ҠӘҘЕРЛЕ** *с.* **1.** Әһәмиәткә, баһаға торошло; баһалы. *Ҡәҙерле буләк. Ҡәҙерле комартҡы. Ҡәҙерле булыу.* / Күңелгә бик яҡын; аяулы, ғәзиз. *Ҡәҙерле бала.* ■ *Ул [Айбулат] үҙенең иң ҡәҙерле кешеһе Лениндан күҙен алмай, ҡул саба.* Һ. Дәүләтшина.

**2.** Оло баһаға, иғтибарлы мөнәсәбәткә лайыҡлы; хөрмәтле. *Ҡәҙерле ҡунаҡ.* ■ *Бик ҡәҙерле икән ай был егет ҡулдарында малы бар саҡта* (Халыҡ йырынан). / Рәсми телдәге ололау һүҙе; хөрмәтле. *Ҡәҙерле иптәштәр.* ■ *[Халыҡ:] Ҡәҙерле Урал атабыҙ, һин шул һыуҙы эсеп ебәр ҙә үлемдең ни икәнен белмәй .. йәшә!* «Урал батыр».

**ҠӘҘЕРЛӘНЕҮ** *ҡ.* **1.** *төш. ҡар.* **ҡәҙерләү.**

**2.** Ҡәҙерлегә әйләнеү. *Торған һайын көндәр ҡәҙерләнә бара.* Ҡ. Даян.

**ҠӘҘЕРЛӘҮ** *ҡ.* **1.** Әрһеҙләмәй, һаҡлап, баплап тотоу. *Юл кәрәк-яраҡтарын, ҡәҙерләп кейә торған кейемде сумаҙанға тултырҙым.* Ф. Иҫәнғолов. / Ғәзиз күреп, аяу; һаҡлау. *Баланы ҡәҙерләп аҫрау.*

**2.** Ҡәҙер-хөрмәт күрһәтеү; ҡәҙер итеү.

● *Илгә бирһәң ашыңды, ил ҡәҙерләр башыңды.* Мәҡәл.

**ҠӘҘЕРЛӘШЕҮ** *ҡ. урт. ҡар.* **ҡәҙерләү.** *Ҡунаҡ ҡәҙерләшеү.*

**ҠӘҘЕР-ХӨРМӘТ** *и. йыйн.* Кемгәлер күрһәтелгән яҡшы мөнәсәбәт, иғтибарлы тәрбиә. *Ҡәҙер-хөрмәт күреү. Ҡәҙер-хөрмәт күрһәтеү.* ■ *Өйрәнсекте .. бығаса күрелмәгән ҡәҙер-хөрмәт менән ололап күмгәндәр.* З. Биишева.

**ҠӘҘЕРҺЕҘ** *с.* **1.** Әһәмиәткә, баһаға торошһоҙ. *Ҡәҙерһеҙ кейем.* / Күңелгә яҡын түгел, аяулы түгел. / Әрләгәндә, яманлағанда әйтелә. *Әсәйгә шундай һүҙ әйтергә нисек баҙнат итә был ҡәҙерһеҙ.* Я. Вәлиев.

**2.** Оло баһаға, иғтибарлы мөнәсәбәткә лайыҡһыҙ; хөрмәтһеҙ. *[Йорттоң] аҫҡы ҡаты .. ҡәҙерһеҙерәк ҡунаҡтар өсөн тәғәйенләнгән.* Ғ. Дәүләтшин.

● *Ҡәҙерһеҙ бала күп йәшәр.* Әйтем.

**ҠӘҘЕРҺЕҘЛӘНЕҮ** *ҡ.* **1.** *төш. ҡар.* **ҡәҙерһеҙләү.**

**2.** Ҡәҙерһеҙгә әйләнеү.

**ҠӘҘЕРҺЕҘЛӘҮ** *ҡ.* Баһаламай, һаҡламай тотоу. *Кейемде ҡәҙерһеҙләү.* / Сит күреп, яратмай ҡарау. *Баланы ҡәҙерһеҙләү.*

**ҠӘҘИМ** [*ғәр.*] *и. иҫк.* **1.** Боронғо заман, элекке ваҡыт. *Яусы — һуғышсы мәғәнәһендә булып, ҡәҙимдә башҡорттарҙа ҡыҙҙы көсләп, һуғышып алыу ғәҙәт булдығынан, хәҙерҙә лә ҡыҙ һораусы иттилаг ҡылына.* С. Яҡшығолов. *Беҙгә ҡәҙимдән бирле кергәне булмағанғалыр инде, өй эсен текләп, берәмтекләп ҡарай.* Т. Килмөхәмәтов.

**2.** *ҡар.* **ҡәҙимселек.** *Ҡәҙим муллаһы. Ҡәҙим мәҙрәсәһе.*

**3.** (*баш хәреф менән*) Ир-ат исеме.

**ҠӘҘИМГЕ** *с.* **1.** Элекке, әүәлге. *Ҡәҙимге дәүер.*

**2.** Ғәҙәткә ингән сифат, баһаға ярашлы; ғәҙәти. *Ҡәҙимге бер кеше. Ҡәҙимге кейем.* ■ *[Апуш:] Ниндәй тип ни,.. ҡәҙимге ҡыш кейеп йөрөй торған йөн быйма инде.* Н. Иҙелбай. *Ямансылға .. үрге ағымында ер аҫтына инеп юғала һәм түбәнге ағымында ғына ҡәҙимге йылғаға әүерелә.* М. Хисмәтов.

**ҠӘҘИМГЕСӘ** *р.* **1.** Элеккесә, әүәлгесә. *Алсынбай — ул иҫке фекерле, ҡәҙимгесә донъя көткән урта хәлле крәҫтиән.* Ғ. Хөсәйенов.

**2.** Ғәҙәткә ингән рәүешсә; ғәҙәтисә. *Кирәй Мәргән ҡәҙимгесә һаман һунарға йөрөй, ти* (Әкиәттән).

**ҠӘҘИМИ** [*ғәр.*] *с.* **1.** *иҫк.* Иҫке, боронғо. *Спас ҡапҡаһы янында гәжәп бер һәндәсә гилеме менән яһалған ҡәҙими сиркәү бар.* З. Шакиров.

**2.** *тар.* Ҡәҙимселеккә бәйле, ҡәҙимселеккә ҡараған. *Ҡәҙими мәктәп.*

**3.** *тар.* Ҡәҙимселек яҡлы, иҫкелек яҡлы булған. *Ҡәҙими кеше.* // *— Әйе, беҙ — замана муллалары, ҡәҙимиҙәр түгел.* Ф. Иҫәнғолов.

**ҠӘҘИМСЕ** *и. тар.* Ҡәҙимселек яҡлы кеше. *Ҡәҙимселәр боронғонан килгән дини мәктәпте .. яҡлап сыҡтылар.* Ғ. Рамазанов.

**ҠӘҘИМСЕЛЕК** *и. тар.* 19 быуат аҙағында мәғрифәттә йәдидселеккә ҡаршы барлыҡҡа килеп, иҫкелекте яҡлаған ағым. *Ҡәҙимселек башында мосолман динселәре тора, хөкүмәт идаралары .. улар яҡлы була.* Ғ. Рамазанов.

**ҠӘҘӘР** [1] [*ғәр.*] *бәйл.* **1.** Төбәү килештәге һүҙҙәр менән килеп, ара, ваҡыт сиген белдерә; саҡлы, тиклем. *Ауылға ҡәҙәр. Йәйгә ҡәҙәр. Әлегә ҡәҙәр. Киткәнгә ҡәҙәр.* ■ *Ватандың арғы сигенән йәйәүләп сыҡһаң әгәр, йыл йөрөрһөң, етә алмаҫһың бирге сигенә ҡәҙәр.* Р. Ниғмәти.

**2.** Ниҙеңдер яҡынса самаһын, иҫәбен күрһәт-

кәндә ҡулланыла. *Етерлек кәҙәр. Мөмкин кәҙәр. Хәлдән килгән кәҙәр.* ■ *Шалтыраған, ялтыраған кемсәләрҙәң ис[е]менә оҡшатып теҙмәккә уйланым хәл кәҙәр был тиҫбене.* Ш. Бабич.

**3.** Ҙурлығы, размеры йәһәтенән кемгә, нәмәгәлер тиңәлгән башҡа бер нәмәне, кешене күрһәткәндә ҡулланыла.— *Ҡала, ҡала бик ҙур тиһең, нисә ауыл кәҙәр булыр, һинеңсә?* Һ. Дәүләтшина. *Беҙ шул эҙҙән тик барырбыҙ, таймабыҙ бармаҡ кәҙәр!* Ғ. Ғүмәр.

♦ **Бер кәҙәр** күпмелер кимәлдә, ниндәйҙер дәрәжәлә. *Бер кәҙәр иркә Гөлсирә балерина булырға хыяллана.* Р. Ниғмәти. **Был кәҙәр** был тиклем дә, бик ныҡ. *Был кәҙәр булырһың икән. Был кәҙәр йәнгә тейерһең икән.* **Шул кәҙәр(е)** шулай уҡ, шул тиклем үк (ҡаршы ҡуйып сағыштырғанда әйтелә). *Минуты ай, сәғәте йыл — шул кәҙәре һағындым* (Халыҡ йырынан). **Әллә ни кәҙәр** *шул уҡ* **әллә ни тиклем** (*кар.* **әллә** [1]). *[Ғаббас] менән бергә әллә ни кәҙәр эшсе, ҡатын-ҡыҙ барырға сыҡты.* Ш. Шәһәр.

**ҠӘҘӘР** [2] [*ғәр.*] *и. иҫк кит.* Яҙмыш. *Мәкәрйә үҙәрә бер күперүк ирер аһ! Ушал күперүк — «сират» атлыг кәҙәр гаһ.* М. Ғафури.

**ҠӘҘӘРЕМ** *бәйл. һөйл. кар.* **кәҙәр** [1].

**ҠӘҘӘРЛЕ** *бәйл. һөйл. кар.* **кәҙәр** [1].

**ҠӘҘӘҮӘТ** [*ғәр.*] *и. иҫк.* **1.** Яҡшы тәм, тат.

**2.** *күсм.* Ҡәҙер, баһа. *Ҡәҙәүәтте ебәреү. Ҡәҙәүәтте һаҡлау.*

**ҠӘЙД** [*ғәр.*]: **кәйд итеү** *шул уҡ* **кәйет итеү** (*кар.* **кәйет**).

**ҠӘЙЕНБИКӘ** *и.* Ирҙең апаһы (ҡатынына ҡарата) һәм ҡатындың апаһы (иренә ҡарата).— *Тәнзилә кәйенбикә,— тине әбейгә ҡарт,— быны ауылға уҡытыусы алып ҡайттым. .. Был әбейең — минең ҡатындың бер туған апаһы,— тине ул шунан Сәғиҙәгә.* М. Тажи.

**ҠӘЙЕНБИКӘС** *и. диал.* Ҡәйенһеңле.

**ҠӘЙЕНЙЕҘНӘ** *и.* Ирҙең еҙнәһе (ҡатынына ҡарата).

**ҠӘЙЕНЙЕҢГӘ** *и.* Ҡатындың еңгәһе (иренә ҡарата). *Ҡәйенйеңгәләре кейәүгә тәңкә һалып, ҡымыҙ эсерә.* М. Буранғолов.

**ҠӘЙЕНҺЕҢЛЕ** *и.* Ирҙең һеңлеһе (ҡатынына ҡарата). *Төшәр өйгә килгәндән һуң яҡын бер кәйенһеңлеһе киленден билен сисеп, билбауын алып ҡайтып китә лә бер нисә көндән аш-һыу менән билбауҙы килтереп, һыйлашып, еңгәһенән йөҙөк алып ҡайта.* М. Буранғолов.

**ҠӘЙЕТ** [*ғәр.*]: **кәйет итеү** *иҫк. кит.* теркәп яҙыу; теркәү. *[Әмирханов:] Фәйзуллин иптәштең .. был мәсхәрәләүҙәрен протоколға кәйет итеүегеҙҙе талап итәм.* С. Агиш.

**ҠӘЙНЕ** *и. диал.* **1.** Ҡайны.

**2.** Ҡәйнеш.

**ҠӘЙНЕГӘС** *и. диал.* Ҡәйенбикә.

**ҠӘЙНЕШ** *и.* Ирҙең ҡустыһы (ҡатынына ҡарата) һәм ҡатындың ҡустыһы (иренә ҡарата). *Кейәү кәйнештәренә аҡса бирмәһә, атының койрогон киҫәләр.* М. Буранғолов.

**ҠӘЙНӘ** *и.* Ирҙең әсәһе (ҡатынына ҡарата) һәм ҡатындың әсәһе (иренә ҡарата). *Килен һаман кәйнәһен күндерергә тырышҡан һымаҡ: «Ҡәйнәм, һин шулай тиһең дә бит»..,— тине.* Т. Йәнәби.

● *Килен кәйнә тупрағынан ярала.* Мәҡәл.

**ҠӘЛБ** [*ғәр.*] *и. иҫк. кит.* Йөрәк. *Алдыбыҙҙа ир тәне, кәлбебеҙҙә ил ғәме.* Ш. Бабич.

**ҠӘЛБӘН** *р. иҫк. кит.* Ихлас йөрәктән, ысын күңелдән. *Ҡәлбән һөйләшеү.*

**ҠӘЛҒӘ** [*ғәр.*] *и. иҫк.* Һөжүмдән ҡурғаныу өсөн төҙөлгән хәрби нығытма; крепость. *Ҡәлғә һуғыу.* ■ *[Әлибай:] Был Кириллов һанаттан илде боларттырырға ярамай, унан кәлғә лә, ҡала ла һалдырмаҫҡа кәрәк.* Ғ. Ибраһимов.

**ҠӘЛМӘРГӘН** *и.* Ҡарсығалар ғаиләһенә ҡараған, балыҡ тотоп ашай торған ҡараһыу ҡанат һәм ҡойроҡло, аҡ ҡорһаҡлы йыртҡыс ҡош.

**ҠӘЛМӘРЕН** *и. диал.* Кармазин. *Ҡәлмәренкәй сәкмән туҙмай тиҙәр, ең осонан ҡырылып туҙа икән* (Халыҡ йырынан).

**ҠӘЛӘМ** [*ғәр.*] *и.* **1.** Нәҙек ағас эсенә буяҡлы үҙәк ҡуйылған яҙыу-һыҙыу өсөн ҡулланылған осло нәмә *Буяу кәләме. Ҡара кәләм. Ҡулға кәләм тотоу.* ■ *Урталағы кеше .. ике башы ла осланган кәләм сығарҙы.* С. Агиш. *Төҫлө кәләмдәре менән бәләкәс малай Юлдаш .. яһаны матур ҡояш.* А. Игебаев. *Ҡашҡынайың нәҙек кәләмдән, аҡылдарың артыҡ әҙәмдән* (Халыҡ йырынан). // *Егет кеше ғашиҡ була ҡыҙҙың кәләм ҡашына* (Халыҡ йырынан). / Һәр төрлө яҙыу-һыҙыу ҡоралы. *Ҡара һауыттары көмөштөр, кәләмдәре генә ҡамыштыр* (Халыҡ йырынан). *Ҡаҙ ҡанаты кәләм булыр яҙыу белгән әҙәмгә* (Халыҡ йырынан). **Ҡәләм тибрәтеү** *иҫк.* кәләм тотоу. *Ҡәләм тибрәтеп, хат яҙыусы туғаның Дилә булыр.* Һ. Дәүләтшина. **Ҡәләм һауыты** кәләм һалып йөрөтә торған ҡапҡаслы ҡумта. **Таш кәләм** таш таҡтаға яҙыу өсөн аспид ташынан яһалған кәләм.

**2.** *күсм.* Яҙыу белеме. *[Ташбулат:] Ана, кооператив асып ебәрҙеләр, унда ла кәләм белгән кеше кәрәк.* С. Агиш. **Ҡәләм эйәһе** яҙыу оҫтаһы; яҙыусы. **Әһле кәләм** *кар.* **кәләм эйәһе.** *Һәр төрлө һүҙ яҙҙы был көн әһле кәләм, күп һөйләнде уҡтар кеүек үткер кәләм.* М. Ғафури.

**3.** *күсм.* Яҙыу һәләте, ижад оҫталығы. *Журналға [«Дәһри»гә] үҙҙәренең кәләме менән танылған күп кенә мәҙәни көстәр ҡатышлыҡ итә.* Т. Йәнәби. **Ҡулға кәләм алыу** ижад эшенә тотоноу, яҙыша башлау. **Ҡәләмгә** (*йәки* **кәләм осона) алыу** яҙып алыу.

♦ **Ике кәләм** башҡорт һәм рус яҙыуы. *Ике кәләмде лә белеү. Ике кәләмгә лә оҫта булыу.*

**ҠӘЛӘМДӘШ** *и.* Бер үк яҙма ижад өлкәһендә эшләгән кеше.

**ҠӘЛӘМКӘШ** [*фарс.*] *и. иҫк.* Эш ҡағыҙҙарын яҙып барыусы.

**ҠӘЛӘМЛЕ** *с.* Яҙыу эшенә һәләтле.

**ҠӘЛӘМФЕР** *и. һөйл. кар.* **кәнәфер** [2]. *Баҙыян да менән кәләмферҙең күрһәң ине сәскә ярғанын* (Халыҡ йырынан).

**ҠӘМБӘРГӘН** *и. диал.* Ҡәлмәргән.

**ҠӘМӘР** [1] [*ғәр.*] *и. иҫк. кит.* **1.** Ай. *Ҡәмәр кеүек йөҙөгөҙҙө күҙем туя мин күрмәнем* (Бәйеттән).

**2.** (*баш хәреф менән*) Ҡатын-ҡыҙ исеме.

**ҠӘМӘР** [2] [*фарс.*] *и.* Ҡашлы ҡаптырма, алтын-көмөш, уҡа-мәрйен менән биҙәлгән яҫы билбау. *Ҡуҙыйкүрпәс .. кама тунын кейеп, билен көмөш*

кәндә ҡулланыла. *Етерлек ҡәҙәр. Мөмкин ҡәҙәр. Хәлдән килгән ҡәҙәр.* ■ *Шалтыраған, ялтыраған кемсәләрҙең ис[е]менә оҡшатып теҙмәккә уйланым хәл ҡәҙәр был тиҫбене.* Ш. Бабич.

**3.** Ҙурлығы, размеры йәһәтенән кемгә, нәмәгәлер тиңәлгән башҡа бер нәмәне, кешене күрһәткәндә ҡулланыла.— *Ҡала, ҡала бик ҙур тиһең, нисә ауыл ҡәҙәр булыр, һинеңсә?* Һ. Дәүләтшина. *Беҙ шул әҙҙән тик барырбыҙ, таймабыҙ бармаҡ ҡәҙәр!* Ғ. Ғүмәр.

♦ **Бер ҡәҙәр** күпмелер кимәлдә, ниндәйҙер дәрәжәлә. *Бер ҡәҙәр иркә Гөлсирә балерина булырға хыяллана.* Р. Ниғмәти. **Был ҡәҙәр** был тиклем дә, бик ныҡ. *Был ҡәҙәр булырһың икән. Был ҡәҙәр йәнгә тейерһең икән.* **Шул ҡәҙәр(е)** шулай уҡ, шул тиклем үк (ҡаршы ҡуйып сағыштырғанда әйтелә). *Минуты ай, сәғәте йыл — шул ҡәҙәре һағындым* (Халыҡ йырынан). **Әллә ни ҡәҙәр** *шул уҡ* **әллә ни тиклем** (*ҡар.* **әллә** [1]). *[Ғаббас] менән бергә әллә ни ҡәҙәр эшсе, ҡатын-ҡыҙ барырға сыҡты.* Ш. Шәһәр.

**ҠӘҘӘР** [2] [*ғәр.*] *и. иҫк кит.* Яҙмыш. *Мәкәрйә үҙәрә бер күперүк ирер аһ! Ушал күперүк — «сират» атлыг ҡәҙәр гаһ.* М. Ғафури.

**ҠӘҘӘРЕМ** *бәйл. һөйл. ҡар.* **ҡәҙәр** [1].

**ҠӘҘӘРЛЕ** *бәйл. һөйл. ҡар.* **ҡәҙәр** [1].

**ҠӘҘӘҮӘТ** [*ғәр.*] *и. иҫк.* **1.** Яҡшы тәм, тат.

**2.** *күсм.* Ҡәҙер, баһа. *Ҡәҙәүәтте ебәреү. Ҡәҙәүәтте һаҡлау.*

**ҠӘЙД** [*ғәр.*]: **ҡәйд итеү** *шул уҡ* **ҡәйет итеү** (*ҡар.* **ҡәйет**).

**ҠӘЙЕНБИКӘ** *и.* Ирҙең апаһы (ҡатынына ҡарата) һәм ҡатындың апаһы (иренә ҡарата).— *Тәнзилә ҡәйенбикә,— тине әбейгә ҡарт,— бына ауылға уҡытыусы алып ҡайттым. .. Был әбейең — минең ҡатындың бер туған апаһы,— тине ул шунан Сәғиҙәгә.* М. Тажи.

**ҠӘЙЕНБИКӘС** *и. диал.* Ҡәйенһеңле.

**ҠӘЙЕНЙЕҘНӘ** *и.* Ирҙең еҙнәһе (ҡатынына ҡарата).

**ҠӘЙЕНЙЕҢГӘ** *и.* Ҡатындың еңгәһе (иренә ҡарата). *Ҡәйенйеңгәләре кейәүгә тәңкә һалып, ҡымыҙ эсерә.* М. Буранғолов.

**ҠӘЙЕНҺЕҢЛЕ** *и.* Ирҙең һеңлеһе (ҡатынына ҡарата). *Төшәр өйгә килгәндән һуң яҡын бер ҡәйенһеңлеһе киленде билен сисеп, билбауын алып ҡайтып китә лә бер нисә көндән аш-һыу менән билбауҙы килтереп, һыйлашып, еңгәһенән йөҙөк алып ҡайта.* М. Буранғолов.

**ҠӘЙЕТ** [*ғәр.*]: **ҡәйет итеү** *иҫк. кит.* теркәп яҙыу; теркәү. *[Әмирханов:] Фәйзуллин иптәштең .. был мәсхәрәләүҙәрен протоколға ҡәйет итеүегеҙҙе талап итәм.* С. Агиш.

**ҠӘЙНЕ** *и. диал.* **1.** Ҡайны.

**2.** Ҡәйнеш.

**ҠӘЙНЕГӘС** *и. диал.* Ҡәйенбикә.

**ҠӘЙНЕШ** *и.* Ирҙең ҡустыһы (ҡатынына ҡарата) һәм ҡатындың ҡустыһы (иренә ҡарата). *Кейәү ҡәйнештәренә аҡса бирмәһә, атының ҡойроғон ҡиҫәләр.* М. Буранғолов.

**ҠӘЙНӘ** *и.* Ирҙең әсәһе (ҡатынына ҡарата) һәм ҡатындың әсәһе (иренә ҡарата). *Килен һаман ҡәйнәһен күндерергә тырышҡан һымаҡ: «Ҡәйнәм, һин шулай тиһең дә бит»..,— тине.* Т. Йәнәби.

● *Килен ҡәйнә тупрағынан ярала.* Мәҡәл.

**ҠӘЛБ** [*ғәр.*] *и. иҫк. кит.* Йөрәк. *Алдыбыҙҙа ир тәне, ҡәлбебеҙҙә ил ғәме.* Ш. Бабич.

**ҠӘЛБӘН** *р. иҫк. кит.* Ихлас йөрәктән, ысын күңелдән. *Ҡәлбән һөйләшеү.*

**ҠӘЛҒӘ** [*ғәр.*] *и. иҫк.* Һөжүмдән ҡурғаныу өсөн төҙөлгән хәрби нығытма; крепость. *Ҡәлғә һуғыу.* ■ *[Әлибай:] Был Кириллов һанаттан илде боларттырырға ярамай, унан ҡәлғә лә, ҡала ла һалдырмаҫҡа кәрәк.* Ғ. Ибраһимов.

**ҠӘЛМӘРГӘН** *и.* Ҡарсығалар ғаиләһенә ҡараған, балыҡ тотоп ашай торған ҡараһыу ҡанат һәм ҡойроҡло, аҡ ҡорһаҡлы йырткыс ҡош.

**ҠӘЛМӘРЕН** *и. диал.* Кармазин. *Ҡәлмәренкәй сәкмән туҙмай тиҙәр, ең осонан ҡырылып туҙа икән* (Халыҡ йырынан).

**ҠӘЛӘМ** [*ғәр.*] *и.* **1.** Нәҙек ағас эсенә буяҡлы үҙәк ҡуйылған яҙыу-һыҙыу өсөн ҡулланылған осло нәмә *Буяу ҡәләме. Ҡара ҡәләм. Ҡулға ҡәләм тотоу.* ■ *Урталағы кеше .. ике башы ла осланған ҡәләм сығарҙы.* С. Агиш. *Төҫлө ҡәләмдәре менән бәләкәс малай Юлдаш .. яһаны матур ҡояш.* А. Игебаев. *Ҡашҡынайың нәҙек ҡәләмдән, аҡылдарың артыҡ әҙәмдән* (Халыҡ йырынан). // *Егет кеше ғашиҡ була ҡыҙҙың ҡәләм ҡашына* (Халыҡ йырынан). / Һәр төрлө яҙыу-һыҙыу ҡоралы. *Ҡара һауыттары көмөштөр, ҡәләмдәре генә ҡамыштыр* (Халыҡ йырынан). *Ҡаҙ ҡанаты ҡәләм булыр яҙыу белгән әҙәмгә* (Халыҡ йырынан). **Ҡәләм тибрәтеү** *иҫк.* ҡәләм тотоу. *Ҡәләм тибрәтеп, хат яҙыусы туғаның Дилә булыр.* Һ. Дәүләтшина. **Ҡәләм һауыты** ҡәләм һалып йөрөтә торған ҡапҡаслы ҡумта. **Таш ҡәләм** таш таҡтаға яҙыу өсөн аспид ташынан яһалған ҡәләм.

**2.** *күсм.* Яҙыу белеме. *[Ташбулат:] Ана, кооператив асып ебәрҙеләр, унда ла ҡәләм белгән кеше кәрәк.* С. Агиш. **Ҡәләм эйәһе** яҙыу оҫтаһы; яҙыусы. **Әһле ҡәләм** *ҡар.* **ҡәләм эйәһе.** *Һәр төрлө һуҙ яҙҙы был көн әһле ҡәләм, күп һөйләнде уҡтар кеүек үткер ҡәләм.* М. Ғафури.

**3.** *күсм.* Яҙыу һәләте, ижад оҫталығы. *Журналға [«Дәһри»гә] үҙҙәренең ҡәләме менән танылған күп кенә мәҙәни көстәр ҡатышлыҡ итә.* Т. Йәнәби. **Ҡулға ҡәләм алыу** ижад эшенә тотоноу, яҙыша башлау. **Ҡәләмгә** (*йәки* **ҡәләм осона) алыу** яҙып алыу.

♦ **Ике ҡәләм** башҡорт һәм рус яҙыуы. *Ике ҡәләмде лә белеү. Ике ҡәләмгә лә оҫта булыу.*

**ҠӘЛӘМДӘШ** *и.* Бер үк яҙма ижад өлкәһендә эшләгән кеше.

**ҠӘЛӘМКӘШ** [*фарс.*] *и. иҫк.* Эш ҡағыҙҙарын яҙып барыусы.

**ҠӘЛӘМЛЕ** *с.* Яҙыу эшенә һәләтле.

**ҠӘЛӘМФЕР** *и. һөйл. ҡар.* **ҡәнәфер** [2]. *Баҙыян да менән ҡәләмферҙең күрһәң ине сәскә ярғанын* (Халыҡ йырынан).

**ҠӘМБӘРГӘН** *и. диал.* Ҡәлмәргән.

**ҠӘМӘР** [1] [*ғәр.*] *и. иҫк. кит.* **1.** Ай. *Ҡәмәр кеүек йөҙөгөҙҙө күҙем туя мин күрмәнем* (Бәйеттән).

**2.** (*баш хәреф менән*) Ҡатын-ҡыҙ исеме.

**ҠӘМӘР** [2] [*фарс.*] *и.* Ҡашлы ҡаптырма, алтын-көмөш, уҡа-мәрйен менән биҙәлгән яҫы билбау. *Ҡуҙыйкүрпәс .. ҡама тунын кейеп, билен көмөш*

*кәмәр менән быуҙы.* «Ҡуҙыйкүрпәс менән Маянһылыу».

**ҠӘМӘРСЕК** *и. диал.* Аҡ сәпсек.

**ҠӘНД** [*фарс.*] *и. иҫк.* Шәкәр. *Һыу өҫтөндәге ҡамыштың асылы берҙер, нәҫеле бер, бәгзеһенән ҡәнд алырҙар, бәгзеһенән — бурыл* (Мөнәжәттән).

**ҠӘНДИЛ** [*гәр.*] *и.* **1.** *иҫк.* Шәм. *Янһын әйҙә нурлы ҡәндил көн һайын.* Ш. Бабич.

**2.** Шәмде күп итеп ҡатарлап ҡуя торған шәм төбө. *Тамсыланып торған гәлсәр ҡәндил йәшел хәтфә пәрҙә менән биҙәлгән.* С. Агиш.

**ҠӘНӘҒӘТ** [*гәр.*] *с.* Булған эш-хәлгә ҡарата ризалыҡлы. *Ҡәнәғәт кеше. Ҡәнәғәт төҫ. // Ҡәнәғәт йәшәү.* ■ *— Урын ул табылыуын табылыр ҙа ..,— тинем. Быны бик тыныс, үҙ хәлемдән ҡәнәғәт булған тауыш менән әйтергә тырыштым.* С. Агиш. *Һөнәрсе бер ҡасан да тынғы белмәгән, үҙ эшенән бер ҡасан да ҡәнәғәт булмаған.* З. Биишева.

□ **Ҡәнәғәт итеү** ҡәнәғәтләнеү. *Аҡ каласка ғына ҡәнәғәт итмәй, хәлүә кеүек нәмәләр ҙә ала торған булып киттек.* М. Ғафури.

**ҠӘНӘҒӘТЛЕК** *и.* Ҡәнәғәт булған хәл. *Ҡәнәғәтлек тойғоһо.* ■ *— Әһә, йүгәлләйһегеҙме?! — Фәхри эске ҡәнәғәтлек менән хахылдап көлдө.* *Б. Бикбай.*

**ҠӘНӘҒӘТЛӘНДЕРЕҮ** *к.* Ҡәнәғәт итеү, ҡәнәғәтлек биреү. *Ихтыяжды ҡәнәғәтләндереү.*

**ҠӘНӘҒӘТЛӘНЕҮ** *к.* Ҡәнәғәт булыу, ҡәнәғәтлек алыу. *Ҡоро сәй менән ҡәнәғәтләнеү. Үҙ эшеңдән ҡәнәғәтләнеү. Кисәге уңыштар менән генә ҡәнәғәтләнеп йәшәргә ярамай.* ■ *Ул [Ғәләү] быға тиклем ҡалған аш ашап ҡына ҡәнәғәтләнә ине.* Т. Йәнәби.

**ҠӘНӘҒӘТСЕЛ** *с.* Һәр нәмәгә ризалыҡ менән ҡараусан. *Ҡәнәғәтсел кеше.*

**ҠӘНӘҒӘТҺЕҘ** *с.* Һәр нәмәгә ризаһыҙлыҡ менән ҡараусан. *Ҡәнәғәтһеҙ кеше. Ҡәнәғәтһеҙ булыу.*

**ҠӘНӘҒӘТҺЕҘЛЕК** *и.* Ҡәнәғәт булмау тойғоһо. *Гусаев егетте һис тә иҫе китмәй, ҙур ҡәнәғәтһеҙлек менән тыңланы.— Был Назаров электән дә дыуамал ине, һаман аҡылға ултыра алмаған икән.* «Ағиҙел», 1982, № 9.

**ҠӘНӘҒӘТҺЕҘЛӘНЕҮ** *к.* Ҡәнәғәтһеҙ булыу, ҡәнәғәтһеҙлек белдереү.*— Уныһы нимәгә кәрәк? — тине Никонов ҡәнәғәтһеҙләнеп.* А. Мағазов.

**ҠӘНӘР** *и. диал.* Күмәгәй.

**ҠӘНӘФЕР** [1] *и.* Нәҙек һабаҡлы, ҡыҙыл, аҡ, алһыу төҫтәге ваҡ сәскәле, ваҡ ҡына ҡыяҡ япраҡлы күп йыллыҡ үлән. *Баҡса ҡәнәфере. Тау ҡәнәфере.* ■ *Әйтерһең дә ҡыҙыл бер ҡәнәфер сәскә атты ҡайын төбөндә.* С. Ҡудаш.

**ҠӘНӘФЕР** [2] [*гәр.*] *и.* **1.** Ҡара-ҡаршы оҙонса япраҡлы, ваҡ ҡына ал, аҡ төҫтәге суҡ сәскәле мәңге йәшел тропик ағас. *Баҙыян да менән ҡәнәферҙең күрһәң ине сәскә ярғанын* (Халыҡ йырынан).

**2.** Шул ағастың аш тәмләү һ. б. өсөн файҙаланылған киптерелгән сәскә бөрөһө. *Ҡәнәфер майы.* ■ *Баҙыян менән ҡәнәферҙән сәйнәп кенә бөткәс тәм ҡала* (Халыҡ йырынан).

**ҠӘНӘФИ** *и. ҡар.* **кәнәфи.**

**ҠӘРҘӘШ** *и.* Туған тейешле кеше; нәҫелдәш. *Алыҫ ҡәрҙәш. Яҡын ҡәрҙәш. // Ҡәрҙәш кеше. Ҡәрҙәш тел.* ■ *Сәйҙән һуң ҡәрҙәштәр, күршеләр көрәшергә килә башланы.* М. Ғафури.

● *Ҡан ҡәрҙәште мал ҡәрҙәш айырған.* Мәҡәл.

**ҠӘРҘӘШ-ҠӘҮЕМ** *и. йыйн. диал.* Туған-ырыу.

● *Ата-инәһен һөймәгән ҡыҙ яман, ҡәрҙәш-ҡәүемен һөймәгән ул яман.* Әйтем.

**ҠӘРҘӘШ-ЫРЫУ** *и. йыйн.* Бер нәҫелдән сыҡҡан кешеләр; туған-ырыу.

**ҠӘРЕНДӘШ** *и. һөйл. ҡар.* **ҡарындаш.**

**ҠӘРИБ** [1] [*гәр.*] *с. иҫк. ҡит.* Яҡын. *Әй туғандар,.. яҡтыҡ һүҙем: юҡһа һәләк булыуыбыҙ ҡәриб инде* (Мөнәжәттән).

**ҠӘРИБ** [2] *и.* **1** *иҫк. ҡит.* Ҡәрҙәш, туған. *Ул беҙгә ҡәриб.*

**2.** (*баш хәреф менән*) Ир-ат исеме.

**ҠӘРЙӘ** [*гәр.*] *и. иҫк. ҡит.* Ауыл. *Хөкөм комиссияһының ҡарары менән фетнәсе бик күп башҡорт ҡәрйәләре ут менән яндырылды йәки туҙҙырып юҡ ителде.* М. Һаҙыев. *Һәр шәһәр, һәр ҡәрйәлә һалдатҡа ҡалған йорт һайын.* Ш. Бабич.

**ҠӘРН** [*гәр.*] *и. иҫк. ҡит.* Йөҙ йыллыҡ ваҡыт араһы; быуат. *Дүртенсе ҡәрн һижри.*

**ҠӘРӘНФӨЛ** *и. ҡар.* **ҡәнәфер.**

**ҠӘСАҮӘТ** [*гәр*] *и. иҫк. ҡит.* Ғауға, янъял, ыҙғыш; күңелһеҙлек. *Туй мәжлестән ни файҙа, ҡәсаүәт булһа пәйҙа?* «Ағиҙел», 1966, № 6.

**ҠӘСД** [*гәр.*] *и. иҫк. ҡит.* Ниәт, маҡсат, теләк. *Ҡай ваҡыт ҡәсдем килә сынлап та нәфсем ҡәтеленә.* Я. Юмаев.

**ҠӘТҒИ** [*гәр.*] *с.* **1.** Кире ҡаҡҡыһыҙ ҡырҡыу; ҡиҫкен, ҡаты. *Ҡәтғи бойороҡ. Ҡәтғи ҡарар. Ҡәтғи талап. Ҡәтғи фекер. Ҡәтғи һорау. Ҡәтғи яуап. Ҡәтғи рәүештә баш тартыу.* ■ *Ишандың һүҙе улар [шәкерттәр] өсөн ҡәтғи икән, ул ярамай тигәнде һис эшләргә ярамай.* М. Ғафури.

**2.** Ҡөсөргәнешле; ҡиҫкен. *Ҡәтғи һуғыш. Ҡәтғи хәл. Ҡәтғи эш.* ■ *Көрәш ҡаты ине, ҡәтғи ине: йә йәшәргә, йәки үлергә!* Б. Ишемғол.

**ҠӘТҒИӘН** [*гәр.*] *р.* Ҡәтғи рәүештә; ҡырҡа. *Ҡәтғиән тыйыу.* ■ *[Мулла:] Йәмәгәт, байҙарҙың малдарына, уларҙың ерҙәренә тейеү ҡәтғиән харам.* Ғ. Хәйри.

**ҠӘТЕЛ** [*гәр.*] *и. иҫк. ҡит.* Үлтереш, үлем яҙаһы. **Нәфес ҡәтеле** *йәки* **ҡәтле нәфес** үҙеңде үҙең үлтереү. *Ҡай ваҡыт ҡәсдем килә сынлап та нәфсем ҡәтеленә.* Я. Юмаев. **Ҡәтле ғам** күмәк үлтереш, ҡырылыш. *Сынғыҙ .. ҡыпсаҡ таифәһен ҡәтле ғам менән тамам һәләк иткән.* «Башҡорт шәжәрәләре», 1960.

**ҠӘТИҒ** [*гәр.*] *бәйл. иҫк. ҡит.* Кеүек. *Күренә ул бәғҙән залим, бәғзән ҡәтиғ мазлум.* Ш. Бабич.

**ҠӘТИФӘ** [*гәр.*] *и.* **1.** Бәрхәт.

**2.** (*баш хәреф менән*) Ҡатын-ҡыҙ исеме.

**ҠӘТРӘ** [*гәр.*] *и.* **1.** *иҫк. ҡит.* Тамсы. *Ҡәрәмең бәхре Оман ҡәтрәһендәй, ҡанса йорт һыу эсте ихсаныңдан.* Аҡмулла.

**2.** *кусм.* Бик бәләкәй өлөш; бөртөк, тамсы. *Бер ҡәтрә оҡшашлыҡ юҡ. Ҡәтрә лә иғтибар күрмәй.* ■ *Ай-һай һаран инде. Таштан йүкә һуйылыр, ә Ғәләүҙән, үләм тиһәң дә, бер ҡәтрә таммаҫ.* Ғ. Ғүмәр.

**ҠӘҮЕМ** [*ғәр.*] *и. иҫк. кит.* **1.** Халыҡ, милләт. *Башҡорт ҡәүеме.* ■ *Был дәүерҙәге ҡәүемдең һәр эше алға китер.* С. Яҡшығолов.

**2.** Ырыу, нәҫел. *Бер ҡәүем кешеләре.*

● *Ауылы берҙең ҡәүеме бер.* Әйтем.

**ҠӘҮЕМ-ҠӘРЕНДӘШ** *и. йыйн.* Нәҫел-нәсәп, туған-ырыу. *Алыҫ ҡалды ҡәүем-ҡәрендәшем, һәр береһе минең өсөн илар имде* (Бәйеттән).

**ҠӘҮЕС** [*ғәр.*] *и.* **1.** *иҫк.* (*баш хәреф менән*) *астр.* Ун ике бөрөждөң береһе; Ғәҡрәп һәм Жәди бөрөждәре уртаһында урынлашҡан.

**2.** Ҡояш календары буйынса туғыҙынсы айҙың ғәрәпсә исеме (22 ноябрь — 21 декабрь ваҡытына тура килә).

**ҠӘҮИ** [*ғәр.*] *с. иҫк. кит.* **1.** Көслө, ҡеүәтле.

**2.** (*баш хәреф менән*) Ир-ат исеме.

**ҠӘҺЕТ** *и. ҡар.* **ғәһед.**

**ҠӘҺЕТЛӘНЕҮ** *ҡ. ҡар.* **ҡәһәтләнеү.**

**ҠӘҺРӘН** *р.* Көсләү, ирекһеҙләү рәүешендә; көслөк менән. *Һеҙ гөрбәтте ҡәһрән үҙәнә ихтыяр итмәҫ* (Мөнәжәттән).

**ҠӘҺҮӘ** [*ғәр.*] *и.* **1.** Орлоғонан айырым эсемлек әҙерләнә торған тропик ағас йәки ҡыуаҡ. *Ҡәһүә ағасы.*

**2.** Шул ағастың орлоғо. *Ҡәһүә йыйыу. Ҡәһүә тартыу.* / Шул орлоҡтан йәки шуға оҡшатып башҡа нәмәнән яһаған онтаҡ. *Ысын ҡәһүә. Арпа ҡәһүәһе.*

**3.** Шул онтаҡтан ҡайнатып әҙерләнгән эсемлек. *Ҡәһүә ҡайнатыу.* ■ *[Низами:] Төрөк ҡәрҙәштәребеҙҙең күп ғаиләләрендә был ваҡыт әле сабах, улар иртәнге ҡәһүәне нәҡ ошо ваҡытта эсә.* Х. Ибраһимов.

**ҠӘҺҮӘХАНА** [*фарс.*] *и. иҫк. кит.* Ҡәһүә эсә торған ижтимағи урын. *[Әхсән:] Низамиҙы Төркиәгә ебәрҙем. Ул унда уҡыу урынына .. ҡәһүәханалар буҫағаһын тапап ғүмерен уҙҙырған.* Х. Ибраһимов.

**ҠӘҺҺАР** [*ғәр.*] *с. иҫк. кит.* Ҡөҙрәтле, көслө. *Әле ғәффар булып, әле ҡәһһар, холоҡландым тәңрем холҡондай.* Ш. Бабич.

**ҠӘҺӘР** [*ғәр.*] *и.* **1.** Көслө йәбер, яуыз эш. *Тәфтиләүҙең ҡылған ҡәһәрҙәрен үҙе белмәһә лә ил белә* (Халыҡ йырынан). / *с. мәг* Тәнде, йәнде ғазапларлыҡ яман; зәһәрле. *Ҡәһәр сир.* ■ *Ул ҡутәргән байҙың ҡәһәр эшен һәм яланғас семъя йөктәрен.* Ғ. Сәләм.

**2.** Бик яман ҡаты асыу. *Дәүләтең бәхетең менән таша бирһен, ҡәһәрең дошмандарҙы баҫа бирһен.* Аҡмулла. *Дошманың байҙарға ут ас, ғәйрәтең, ҡәһәреңде сәс.* Б. Мирзанов.

**3.** Ҡаты ҡарғыш, ләғнәт. *Ҡәһәр уҡыу.* ■ *[Гәрәй:] Хоҙаның ҡаты ҡәһәре төшөр әле бер, кеше малы тамағығыҙға тығылыр.* Б. Бикбай. / Әрләгәндә, һуҡранғанда әйтелә. *Ҡыҙғанманы, ҡәһәр, ҡарғап-ҡарғап инеп китте тағы өйөнә, ә мин тышта .. таң аттырҙым туңған көйөмә.* Ғ. Амантай. *Үгеҙ, ҡәһәрең, ашығыуҙың ни икәнен белмәй* (Әкиәттән). **Алланың (ҡаты) ҡәһәре һуҡҡыр** *ҡар.* **ҡәһәр һуҡҡыр. Ҡәһәр һуҡҡан** әрләгәндә әйтелә. *Аҡса тигән нәмә, ҡәһәр һуҡҡан, башты-күҙҙе тиҙ бәйләй.* Р. Низамов. **Ҡәһәр һуҡҡыр** (*йәки* **төшкөр**) ҡарғағанда әйтелә. *Ана шул ҡәһәр һуҡҡыр Ҡунай әтлеге был! — тип ҡарғана бай* (Әкиәттән).

**4.** *с. мәг.* Бик яҡшы, бик шәп. *Ҡәһәр егет. Ҡәһәр ҡыҙ. Ҡәһәр йорт. Уның уҡыуы ҡәһәр.* // *Ҡәһәр бейей. Ҡәһәр йырлай. Ҡәһәр шәп. Ҡәһәр тырыш. Ҡәһәр яҡшы һөйләй икән был кеше.*

□ **Ҡәһәр итеү** ҡәһәрләү. *[Көбәк:] Ҡара ҡарғыш менән ҡәһәр итеп, иҫкә алырҙармы икән исемемде?* Б. Бикбай.

**ҠӘҺӘРЛЕ** *с.* **1.** Аяуһыҙ, рәхимһеҙ, яуыз. *Ҡәһәрле дошман ҡулына ҡала ҡүрмә* М. Тажи.

**2.** Ҡәһәрләнгән, ҡәһәр ителгән; ҡарғышлы, ләғнәтле. *Ҡәһәрле ғүмер. Ҡәһәрле көндәр. Ҡәһәрле тормош. Ҡәһәрле яҙмыш.* ■ *Хәлкәй үҙе тормоштоң иң ҡәһәрле ҡатламынан килеп сыҡҡан кеше.* Д. Юлтый. / Ҡәһәр, ләғнәт ҡатыш. *Ҡәһәрле һүҙ.*

**ҠӘҺӘРЛЕК** *и.* Ҡаты асыу, зәһәр. *Тауышында ҡәһәрлек ишетелде.* М. Тажи. / Әрләгәндә әйтелә.— *Шуларҙыр инде, ҡәһәрлектәр, ҡоротҡолар бит донъяны, дошмандар.* Һ. Дәүләтшина.

**ҠӘҺӘРЛӘНЕҮ** *ҡ.* **1.** *төш. ҡар.* **ҡәһәрләү.** *Ниңә тейеш ҡәһәрләнергә гел бөтә ябай хеҙмәт.* Н. Нәжми.

**2.** Ҡаты асыу менән ярһыу. *[Юха] ҡәһәрләнеп, ҡылыс менән саба.* З. Биишева. *Ҡуҙеңде ас, егет, бул ҡаһарман, зәһәр сәсеп ажғыр, ҡәһәрлән! Ҡур, илеңде ялмап һәр яғынан дүрләп янып килә йәһеннәм.* Ш. Бабич.

**ҠӘҺӘРЛӘҮ** *ҡ.* Яман теләк, ҡарғыш менән әрләү; ҡарғау, ләғнәтләү. *Кешене ҡәһәрләү. Һуғышты ҡәһәрләү. Яҙмышты ҡәһәрләү. Халыҡ фашизмды мәңге ҡәһәрләр.*

**ҠӘҺӘТ** [*ғәр.*] *и. ҡар.* **ғәһед.** *Ҡәһәт биреү. Ҡәһәтте боҙоу.*

□ **Ҡәһәт итеү** һүҙ биреү, вәғәҙә итеү, ант итеү. *[Нигмәтулла] ауылдаштарын астан үлтерергә ҡәһәт итте.* Я. Хамматов.

**ҠӘҺӘТЛӘНЕҮ** *ҡ.* **1.** Ныҡлы ниәт, бурыс ҡуйыу; хасланыу. *Ҡәһәтләнеп йөрөү. Кешегә ҡәһәтләнеү.* ■ *Исмәғил менән Йомабай эстән генә ҡәһәтләнеп, Тәфтиләүҙе үлтермәксе була* (Легенданан).

**2.** Асыу, үс менән ярһыу. *«Ҡайтып ҡына ҡүҙемә ҡүренһен әле, тотоп сыбыҡламаһаммы!— тип ҡәһәтләнде [Разия].* Ш. Янбаев.

# Л

**Л** [эль] Башҡорт алфавитының ун алтынсы хәрефе.

**ЛА** [1] (лә) *терк.* **1.** Һөйләмдәге ике тиң киҫәктәрҙе һәм һөйләмдәрҙе бер-береһенә теркәй. *Утта ла янмаҫ, һыуҙа ла батмаҫ.* ■ *Бөтә малыбыҙ бер кәзә лә бер тауыҡ* (Әкиәттән). / Ҡабатланып йәки ҡушарлап килгән ике ҡылымды, исемде һ. б. теркәп, уларҙың мәғәнәләрен көсәйткән һүҙбәйләнештәр яһай. *Ала ла ҡола. Талаша ла тартыша. Һуҡты ла йыҡты.* ■ *Ғәләү һаман ятмай, уңайһыҙланып тора ла тора.* Б. Бикбай.

**2.** Әҙмә-эҙлекле эш-хәрәкәтте белдергән ике хәбәрҙе теркәй. *Яна ла һүнә.* ■ *Сыҡты ла ул [ҡыҙ] ҡыуаҡтарға ҡулын һондо.* М. Кәрим.

**3.** Үҙ-ара һөҙөмтәлелек, сәбәп, ҡаршылыҡ

мөнәсәбәттәрендә булған ике һөйләмде теркәй. *Шәһиҙә әбей ҡунаҡҡа саҡырҙы ла улар төнгә ҡалды.* Һ. Дәүләтшина.

● *Ҡайҙа барһаң, бер ҡояш — таң ата ла ҡис була.* Мәҡәл. *Беләм тип эш башла ла кәңәш ит бабайыңа.* Мәҡәл.

**ЛА**[2] **(лә)** *киҫ.* **1.** Бер төшөнсәне бүтән тиң төшөнсәләрҙән айырып, баҫым яһай. *Тауышы ла сыҡмай. Эҙе лә ҡалмаған.* ■ *Әллә ҡайҙарға китте беҙҙең баштар, манара ла күренмәй.* Б. Бикбай / Айырым төшөнсәне дөйөм хәлгә бәйләп, мәғәнәгә баҫым яһай. *[Ныяҙғол:] Их, хаты ла юҡ. Исмаһам, бер өмөт булыр ине.* Һ. Дәүләтшина. / Дөйөм хәлдән бүлеп, айырым бер шартҡа баҫым яһай. *Кем булһа ла. Ҡасан булһа ла. Кисләтеп булһа ла кил.* ■ *Ҡалай булһа ла бәләнән ҡотолорға кәрәк* (Әкиәттән). / Шарт мәғәнәһе биргән формалар менән берлектә кире һөйләм яһай. *Мең десятинаһын һатҡанда ла ике йөҙ мең файҙа ҡала.* Һ. Дәүләтшина.

**2.** Баҫым яһап, һүҙҙең лексик йәки грамматик мәғәнәһән көсәйтә. *Башына ла килтермәй. Бер нәмә лә белмәй. Бәләкәс кенәне лә ҙур итә. Саҡ ҡына ла көтмәй. Уйларға ла иренә.* / Айырым баҫым менән билдәләп, һүҙҙе көсәйтә. *Нимә булһа ла йылы булһын. Ни эшләһә лә ҡулынан килә. Ҡыла ла һуң ҡылыҡты. Таба ла һуң һүҙ. Саба ла һуң елдереп.*

**3.** Ҡушма ҡылымдың ике компоненты араһында килеп, дөйөм мәғәнәне көсәйтә. *Һынды ла ҡуйҙы. Китте лә барҙы.* / Төп ҡылым менән төрлө ярҙамлыҡ һүҙҙәр араһында килеп, мәғәнәгә йомшаҡлыҡ төҫмөрө бирә. *Бөгөнгә китмәй тор, миңә ҡыйын була ла инде. Мине тартмаһа ла, һаман уға ынтылам.*

**4.** Йырҙың һүҙҙәрен оҙон көйгә тап килтереү өсөн ҡулланыла. *Кәмәлекәй буйы ла, эй урман, йүгереп кенә булмай — ҡарама. Арыҫландай егет, эй, булһаң да, кәңәш итмәй эшләү ярамай* (Халыҡ йырынан).

◆ **Ла баһа (лә баһа)** *ҡар.* **баһа**[2]. *Иртәнсәк радио һөйләмәгәс, Мәфтуха еңгә бик гәжәпләнде. «Ел-ямғыр ҙа булманы ла баһа, был ни эшләне икән тағы»,— тине.* Ә. Вәли.

● *Алтын ерҙә ятһа ла серемәҫ.* Мәҡәл. *Ашҡа ла бар бер сама.* Әйтем. *Аҡ эт, ҡара эт — барыһы ла эт.* Мәҡәл. *Батырға ла ял кәрәк.* Әйтем.

**ЛАБАҺА (ләбаһа)** *киҫ. шул уҡ* **ла баһа** (*ҡар.* **баһа**[2]).

**ЛАБИАЛИЗА́ЦИЯ** [*рус.* 〈 *лат.*] *и. лингв.* Телмәрҙәге ҡайһы бер өндәрҙең ирендәрҙең ныҡ ҡатнашлығында әйтелеше, иренләшеүе.

**ЛАБИАЛИЗАЦИЯЛАУ** *к. ҡар.* **иренләшеү.**

**ЛАБИРИ́НТ** [*рус.* 〈 *гр.*] *и.* **1.** Парктағы, баҡсалағы әйләнеп сыҡҡыһыҙ буталсыҡ юлдар селтәре һәм шундай юлдар менән сырмалған парк йәки баҡса.

**2.** Ҡатмарлы, буталсыҡ төҙөлөшлө һәр бер нәмә. *Галя бер-береһенә терәтеп һалынған кәбәндәр кеүек ҡыҫылып торған тауҙар лабиринтына ҡарап һоҡлана.* Ғ. Ибраһимов. / *күсм.* Аңлайышһыҙ, осона сыҡҡыһыҙ нәмә. *Уйҙар лабиринты.*

**3.** *анат.* Умыртҡалы хайуандарҙа һәм кешелә ҡолаҡтың ишетеү һәм кәүҙәне тигеҙ тотоу функцияһын үтәгән эске бер өлөшө. *Ярылы лабиринт.* **Һөйәк лабиринт** ярылы лабиринт урынлашҡан кимерсәк йәки һөйәк.

**ЛАБОРА́НТ** [*рус.* 〈 *лат.*] *и.* **1.** Ғилми ойошма һәм лабораторияларҙағы ғилми-техник хеҙмәткәр. *Лаборант булып эшләү. Иген ҡабул итеү пункты лаборанты. Лаборант врач.* ■ *Ғалимды ғалим иткән — лаборант. Унан башҡа ғалим ҡанаты имгәнгән ҡош булыр ине.* Н. Мусин.

**2.** Студенттар, уҡыусылар лабораторияла эшләһен өсөн приборҙар, препараттар әҙерләп торған хеҙмәткәр. *Физика кабинеты лаборанты. Химия кабинеты лаборанты.*

**ЛАБОРАТОР** [*рус.* лабораторный] *с.* Лабораторияла башҡарыла торған. *Лаборатор тикшереүҙәр. Лаборатор эштәр.*

**ЛАБОРАТО́РИЯ** [*рус.* 〈 *лат.*] *и.* **1.** Эксперименталь ғилми тикшеренеү эше алып барған ойошма йәки уның бер бүлеге. *Агрохимия лабораторияһы. Археология лабораторияһы. Клиник лаборатория. Химия лабораторияһы.* / Анализлау һәм һынау эштәре алып барған ойошма йәки уның бүлеге. *Криминалистика лабораторияһы. Лаборатория анализы. Орлоҡ тикшереү лабораторияһы. Социология лабораторияһы.* ■ *Улар [Тимерҙәр] көҙ көнө үк орлоҡтарҙың сығышын район ер бүлеге лабораторияһында тикшертте.* Б. Бикбай. / Шул ойошмалар урынлашҡан бина, бүлмә. *Лаборатория ҡорамалдары.* ■ *Сәй ҡайнағансы тип, [Шәкир] лаборатория яғына сыҡты.* Н. Мусин.

**2.** *күсм.* Ижади эшмәкәрлек өлкәһе. *Яҙыусының ижади лабораторияһы.*

**ЛАБЫРЛАҠ** *с. һөйл.* Ауыҙ тултырып күп һөйләүсән. *Лабырлаҡ кеше.* // *Тыңлама шул лабырлаҡты.*

**ЛАБЫРЛАТЫУ** *к. йөкм. ҡар.* **лабырлау.** *[Йәннәтбикә:] Уф, аллам, лабырлатма әле анау нәмәкәйеңде [радионы].* Ф. Иҫәнғолов.

**ЛАБЫРЛАУ** *к.* Лабыр-лобор итеү, лабыр-лобор килеү. *[Забира] алсаҡ, лабырлап хәбәрен һөйләп тора.* Н. Мусин.

**ЛАБЫРЛАШЫУ** *к. урт. ҡар.* **лабырлау.** *Өмәселәр бер ҙур табын булып әйләнеп ултырҙы ла әңгәмәләшеп, лабырлашып, ашап-эсергә тотондо.* Һ. Дәүләтшина.

**ЛАБЫР-ЛОБОР** *оҡш.* Туҡтауһыҙ һөйләшкәндәге тоноҡ тауышты белдергән һүҙ. *Лабыр-лобор итеү. Лабыр-лобор килеү.* ■ *Түбән яҡтан лабыр-лобор һөйләшеп, тағы ике-өс кеше килә.* Ф. Иҫәнғолов.

**ЛАБЫРЛЫҠ: лабырлығы сығыу** (*йәки* **килеү**) туҡтауһыҙ күп һөйләү.

**ЛА́ВА**[1] [*рус.* 〈 *ит.*] *и.* Вулкандан урғылып сыҡҡан утлы шыйыҡ минераль матдә. *Лава урғылышы.* ■ *Янар тауҙар ҙа бит көслө була, лавалары янһа эсендә.* З. Биишева.

**ЛА́ВА**[2] [*рус.*] *и.* Күмер ҡатламын йәки башҡа файҙалы ҡаҙылмаларҙы ҡаҙып сығара торған оҙон забой теҙеме.

**ЛА́ВА**[3] *и. хәрби* Атлы ғәскәрҙең дошманды ҡамау өсөн теҙелгән тәртибе һәм шул тәртиптә теҙелгән ғәскәр төркөмө. *Эскадрон лаваһы.* ■ *Бесән эҫкерте артында .. йәшеренеп ятҡан*

*егеттәр һикерешеп торҙолар ҙа юлбарыҫ ҡыйыулығы менән дошман лаваһына барып инделәр.* Ә. Ихсан.

**ЛА́ВКА** [*рус.*] *и.* Ҙур булмаған магазин. *Кусмә китап лавкаһы. Кооператив лавкаһы.* ■ *Шәһит бабай кәфенлек һатып алыр өсөн Ҡормош бай лавкаһына йүнәлде.* З. Биишева. *Лавкаларға таҫма килгән, алайыҡ һарыларын* (Халыҡ йырынан).

**ЛАВКАСЫ** *и.* **1.** *иҫк.* Лавка тоткан кеше, лавка хужаһы. *Шәғәли ауылда лавка асып, ете йыл самаһы тора.. Лавкасының башы Ырымбур — Стәрле — Өфө юлынан ҡайтмай.* Б. Бикбай.

**2.** Лавкала һатыу иткән кеше. *[Закир — Хамматка:] Беләһеңме, лавкасы ағай китаптарын минән бер ҙә йәлләмәй. Уҡы, егет, күҙеңде ас, ти.* З. Биишева.

**ЛАВР** [*рус.* ⟨ *лат.*] *и.* **1.** Япрағы тәмләткес итеп ашҡа һалына торған хуш еҫле мәңге йәшел көньяҡ ағасы. *Азар (йәки канар) лавры. Аҫыл лавр.* ■ *Кавказдың Ҡара диңгеҙ яры буйында үҫкән мәңге йәшел лавр ағасының япрағын төрлө ашамлыҡҡа һалалар.*

**2. Лавр һымаҡтар, лаврҙар** *бот.* Мәңге йәшел көньяҡ ағастар ғаиләһенең (лавр, камфара ағасы һ. б.) атамаһы.

◆ **Лавр венок** еңеү, триумф символын кәүҙәләндергән лавр япрағынан эшләнгән венок (боронғо гректарҙа һәм Римдәрҙә бындай венок менән төрлө ярыштарҙа — дискы ырғытыу, йүгереү, шиғыр һөйләү, ораторлыҡ итеү, музыкала уйнау һ. б. еңгән кешене бүләкләгәндәр). **Лавр япрағы** лаврҙың ашҡа йәки маринад яһар өсөн әҙерләнгән ҡоро япрағы.

**ЛА́ВРА** [*рус.* ⟨ *гр.*] *и.* Әһәмиәте һәм ҙурлығы менән танылҡлы булған православие ирҙәр монастыры исеме. *Александр Невский лавраһы. Троице-Сергиевский лавраһы.* ■ *Киевка килгән кеше бындағы тарихи-культура ҡомарткыһы Киев-Печера лавраһында булмай китмәй.* Ғ. Рамазанов.

**ЛАВСА́Н** [*рус.*] *и.* **1.** Нефттән эшкәртеп алынған синтетик еп төрө. *Быныһы лавсан тигән нәмә, ул йөндө алмаштыра.* Ғ. Рамазанов.

**2.** Шул ептән һуғылған туҡыма. // *Лавсан костюм. Лавсан күлдәк.* ■ *Фирма лавсан һәм башҡа синтетик туҡыманан төрлө кейем тегә башланы.* «Башҡортостан ҡыҙы», 1969, № 3.

**ЛАГ** [рус. ⟨ *гол.*] *и.* *диңг.* Караптың үткән юлын һәм тиҙлеген үлсәй торған прибор. **Лаг ташлау** приборҙы эшләтеү өсөн һыуға төшөрөү.

**ЛА́ГЕРЬ** [*рус.* ⟨ *нем.*] *и.* **1.** Ғәскәрҙең ҡырҙағы ваҡытлы торағы. *[Бәкер:] Мин лазареттан ҡайтҡанса, полк ҡала ситенә, түңәрәк урынға лагерға сыҡҡан.* А. Таһиров.

**2.** Ваҡытлыса йәшәгән урын; тораҡ. *Лагерь ҡороу.* / Ял итеү, күнегеүҙәр үткәреү маҡсатында ваҡытлыса туҡталып торған ҡаланан ситәге урын. *Спорт лагеры. Туристар лагеры.* / *ҡар.* **йәйләү.** *Мал лагеры.*

**3.** Тотҡондар, әсирҙәр тотола торған урын. *Тәрбиәүи хеҙмәт лагеры. Әсирҙәр лагеры.* ■ *[Мәксүтов] әшендә бер ҙур хаталыҡ эшләп хөкөм ителгәндер,— тигән һығымтаға килде лагерҙа ултырыусылар.* Х. Зарипов. *Мораҙым 6 йылды холоҡ төҙәтеү-хеҙмәт лагерында алыҫ һәм һалҡын себерҙә үткәрҙе.* Ғ. Әмири.

**4.** *күсм.* Ижтимағи-политик төркөм; йүнәлеш. *Тыныслыҡ лагеры. Дошман лагеры.*

◆ **Концентрацион лагерь** *ҡар.* **концентрацион. Пионер лагеры** мәктәп балаларының йәйгелектә ял итә торған урыны. *Сәйҙел, Зәйнәп «Артек» пионер лагерында булдылар. Унда пионерҙар Ер шарының бөтә мөйөшөнән йыйылған.* Ғ.Сәләм.

**ЛАГУ́Н** [*рус.* ⟨ *гр.*] *и.*, **дегет лагуны** *диал.* Дегет силәге (*ҡар.* **дегет**). *[Хәсән] бирәүҙән бер лагун дегет алып ҡайтып арбаһын майлап ебәрҙе.* К. Мәргән.

**ЛАҒЫРЛАҠ.** *с.* Күп һөйләүсән.

**ЛАҒЫРЛАТЫУ** *ҡ.* **1.** Лағыр-лоғор иттереү, лағыр-лоғор килтереү. *Лағырлатып һыу ҡайнатыу.*

**2.** *күсм.* Ялыҡтырғыс итеп һөйләндереү, күп һөйләргә юл ҡуйыу; лабырлатыу.

**ЛАҒЫРЛАУ** *ҡ.* **1.** Лағыр-лоғор итеү, лағыр-лоғор килеү. *Пар ҡаҙандары лағырлап, үкереп ҡайнап сыҡты ла ярылырҙай булып шауларға тотондо.* Ш. Шәһәр.

**2.** *күсм.* Ялыҡтырғыс итеп күп һөйләү; лабырлау. *Лағырлап хәбәрен һөйләп тора.*

**ЛАҒЫРЛАШЫУ** *ҡ. урт. ҡар.* **лағырлау.**

**ЛАҒЫР-ЛОҒОР** *оҡш.* **1.** Ҙур һауыттағы һыу ҡайнағанда сыҡҡан тауышты белдергән һүҙ. *Лағыр-лоғор итеү. Лағыр-лоғор ҡайнау.*

**2.** Һөйләгәндә сыҡҡан тоноҡ тауышты белдергән һүҙ; лабыр-лобор. *Лағыр-лоғор килеү.*

**ЛАД** [*рус.*] *и. муз.* Тауышты билдәле тәртиптә төҙөү ысулы, өн һәм яңғыраштың килешле ярашыуы; музыка әҫәренең төҙөлөшө. *Хәҙерге ваҡытта музыка сәнғәтендә өҫтөнлөк иткән мажор һәм минор ладтарынан башҡа төрлө халыҡ йырҙарында осраған ладтар ҙа йәшәп килә.* Ғ. Сөләймәнов.

**ЛАДЬЯ́** [*рус.*] *и.* Манарағa оҡшатып эшләнгән шахмат фигураһы; тура.

**ЛАЗАРЕ́Т** [*рус.* ⟨ *фр.*] *и.* Ғәскәри часть эргәһендәге ҙур булмаған больница. *Полк лазареты. Лазаретка оҙатыу. Лазаретка эләгеү.* ■ *Мин уянғанда Петроградтағы бер лазаретта ятҡанымды күрҙем. Тотош бинт менән сырмалған һул ҡулым һыҙлай ине.* Ш. Хоҙайбирҙин. *Садрислам .. еңелсә яраланып, лазаретта ла ятып сыҡты.* Ф. Иҫәнғолов.

**ЛА́ЗЕР** [*рус.*] *и.* Оптик генератор — тулҡыны билдәле бер оҙонлоҡта булған, бик нәҙек, көслө нур сығанағы. *Газ лазеры. Лазер нурланышы. Лазер сваркаһы. Лазер менән киҫкеләү.* ■ *Йондоҙҙарҙы мең-мең йылдар аша лазер менән капшап ҡарайым.* Р. Бикбаев.

**ЛАЗЫМ** [*ғәр.*] *с. иҫк.* Кәрәк(ле), тейеш(ле). *Лазым табыу. Лазым күреү.* ■ *Партия тарихын .. тикшереү өсөн Башҡортостандағы бөтә коммунист иптәштәрҙең ҡатнашыуы лазым.* Ш. Хоҙайбирҙин. *Уның [Өмөтбаевтың] әҫәрҙәрен уҡыу, белеү беҙгә лазымдыр.* З. Шакиров. *Инде беҙгә лазым булды кәсеп итмәк, беҙ фәрештә булмағас, икмәк кәрәк.* Ш. Әминев.

● *Ғәрәп теле гәрәпкә лазым.* Мәҡәл.

**ЛАЗЫМЛАНЫУ** *к. иҫк. төш. кар.* **лазымлау.** *Грозный тарафынан лазымланған яһак .. баян ҡылына.* «Башҡорт шәжәрәләре», 1960.

**ЛАЗЫМЛАУ** *к. иҫк.* Тейешле, мотлаҡ итеү. *Ҡонкас сәсән йә һамаҡларға тотона, йә лазымлап әйтем әйтә.* Ғ. Ибраһимов.

**ЛАИХӘ** [*ғәр.*] *и. иҫк. кит.* Тәҡдим ителгән проект. *Хәреф вә имлә лаихәһе.* ■ *БашЦИК административ комиссияның Ҙур Башҡортостанды ете кантонға бүлеү тураһындағы лаихәһен тәсдиҡ итеп, декрет сығарған ине.* Ш. Хоҙайбирҙин.

**ЛАЙ** *и.* **1.** Һыу төбөндәге шыйыҡ мәте; ләм. *Урман бабай тирәктең яраһына ла лай яба һәм, арбанан бау алып, сырмап бәйләп ҡуя.* И. Солтанов. *Баткаҡта снарядтар ярыла, һауаға лай күтәрелә.* А. Таһиров.

**2.** *диал.* Иҙмә. *«Кирбес кәрәк, кирбес!». «Лай бирегеҙ!». «Ҡустым, йәһәтерәк һыу сығар».* Р. Бикбаев.

**ЛАЙҒЫ** *и.* Яҙ көнө тау башынан шыуған ҡар. *Ҡар күп йылды мартта лайғы шыуып, ҡоралайҙар һәләк була.*

**ЛА́ЙКА** [*рус.*] *и.* Махсус юл менән кәзә-һарыҡ тиреһенән эшләнгән йомшаҡ күн. // *Лайка бирсәткә.*

**ЛАЙКАТЛЫ** [*ғәр + төрк.*] *с. диал.* **1.** *кар.* **яғымлы** 2. *Бәхетенә ҡаршы бик лайкатлы кеше тура килде.*

**2.** Уңайлы.

**ЛАЙЛА** *и.* **1.** Шыйғаҡлап торған ҡуйы шыйыҡса. *Йүкә лайлаһы.* ■ *Их донъя! Берәүҙәрең һинең ҡая һымаҡ, берәүҙәрең шул ҡаяға яғылып ҡалған лайла һымаҡ.* Ә. Вахитов. *Юл баткаҡ вә лайла, ҡул-аяҡ бығауҙа.* Ш. Бабич.

**2.** *диал.* Ылымыҡ.

**ЛАЙЛАЛАНЫУ** *к.* **1.** Лайлалы булыу. *Тоҙло бәшмәк лайлаланып тора.*

**2.** Лайлаға буялыу. *Йүкә һыҙырғанда өҫтөм лайлаланып бөттө.*

**ЛАЙЛАЛАУ** *к.* Лайлалы итеү, лайлаға буяу. *Балыҡ ҡулымды лайлаланы.*

**ЛАЙЛАЛЫ** *с.* **1.** Лайла менән ҡапланған. *Лайлалы йүкә. Лайлалы балыҡ.*

**2.** Лайлаға буялған. *Лайлалы ҡул.*

**ЛА́ЙНЕР** [*рус.* ⟨*ингл.*] *и.* **1.** Билдәле бер маршрут менән йөрөгән эре диңгеҙ йәки һауа карабы. *Океан лайнеры. Пассажирҙар лайнеры.* ■ *Хәҙер ТУ-154 лайнерҙары Өфөнән көн һайын юлға сығасаҡ.* «Совет Башҡортостаны», 1986, 10 июнь.

**2.** Рейстағы ҙур пассажир самолёты. *Һауа лайнеры.*

**ЛАЙЫҠ** [*ғәр.*] *с.* **1.** Ниндәйҙер талапҡа яуап бирерлек, тура килерлек; ярарлыҡ, ярашлы, торошло. *Иғтибарға лайыҡ. Лайыҡ булыу. Лайыҡ күреү. Лайыҡ табыу.* ■ *Эҙлә үҙеңә лайыҡ пар күңел.* И. Насыри. *[Егет:] Ул ҡыҙ минең хыялымдың сағыу ҡояшы һәм ҡанатлы быуынымдың лайыҡ ҡорҙашы.* Н. Иҙелбай. *Ниндәй яза лайыҡ булыр икән салма кейгән ҡара йыланға?* Х. Ҡунаҡбай.

**2.** Әҙәп-тәртипкә һыйған, ярашлы; килешле. *Был лайыкмы айырылып унан йыракта торғаның.* Ш. Бабич. *Хатты укыгас, китмәк булды батыр Бабсаҡ (лайыкмы, белгән һүҙҙе әйтмәй ҡалһаҡ?) Уйлаған, саҡырғас, барайыҡ .. якшы түгел, ҡоткән ергә бармай ҡалһаҡ.* «Бабсаҡ менән Күсәк».

**3.** *и. мәғ.* Эш-хәлдең ыңғайы, уңайы, яйы. *Һүҙ лайығы сығыу.*

**ЛАЙЫҠЛАУ** *к.* Лайыҡ хәлгә килтереү, лайыҡ итеү. *Лайыҡлап йыр сығарыу.*

**ЛАЙЫҠЛЫ** *с.* Лайыҡ булырлыҡ; лайыҡ. *Лайыҡлы өлөш. Өлкәндәргә лайыҡлы алмашсы. Лайыҡлы булыу. Лайыҡлы итеү.* / *Лайыҡлы рәүештә маҡтау. Лайыҡлы табыу.* ■ *Фәтхел эше, Фәтхел батырлығы данға һәм хөрмәткә лайыҡлы.* Р. Ниғмәти. *Ә бит ул [Зөлхизә] бәхеттең иң олоһона лайыҡлы.* З. Биишева.

**ЛАЙЫҠҺЫҘ** *с.* Ниндәйҙер талапҡа яуап бирмәгән; нимәгәлер ярарлыҡ, ярашлы, торошло түгел; лайыҡ түгел.

**ЛАЙЫЛДАУ** *к. диал. кар.* **лаҡылдау.**

**ЛАЙЫШ** *с. диал.* Ҡылансыҡ. *Лайыш кеше.*

**ЛАЙЫШЛАНЫУ** *к. диал.* Ҡылансыҡланыу. *Лайышланып йөрөү.*

**ЛАК** [1] [*рус.* ⟨ *ит.*] *и.* Ыҫмаланың ағас, тимер һ. б. нәмәләрҙе ялтыратыу, боҙолоуҙан һаҡлау өсөн тыш яғынан буяла торған иретмәһе. *Майлы лак. Спиртлы лак. Лак ялатыу. Һалҡында лак ярыла.*

**ЛАК** [2] *и.* Дағстандың төп халыҡтарының береһе һәм шул халыҡтың бер кешеһе (Кавказ-Иберей телдәренең береһендә һөйләшә). *Лак халҡы. Лак ҡыҙы. Лак теле.*

**ЛАКЕ́Й** [*рус.* ⟨*фр.*] *и.* **1.** Баярҙарҙың, эре байҙарҙың шәхси хеҙмәтсеһе. *Өҫтөнә форма кейгән йәш лакейҙар уның [повозканың] өлкән кузлаһы аҫтына эреле-ваҡлы сумаҙандар тейәне.* Һ. Дәүләтшина. / Капиталистик илдәрҙәге ресторан, гостиницаға килгән кешене ҡарап, тәрбиәләп йөрөгән хеҙмәтсе.

**2.** *кусм.* Кешегә ярап, кеше иркен үтәп йөрөгән кеше. *Был малайҙан лакей түгел, көрәшсе сығасаҡ.* С. Агиш.

**ЛАКЕЙЛЫҠ** *и.* Лакей (1 мәғ.) хеҙмәте.

**ЛАКЛАНЫУ** *к. төш. кар.* **лаклау.** *Лакланған иҙән.* ■ *Аяғында лакланған ботинка.* С. Агиш.

**ЛАКЛАТЫУ** *к. йөкм. кар.* **лаклау.** *Иҙәнде лаклатыу.*

**ЛАКЛАУ** *к.* Лак менән буяу, лак яғыу. *Өҫтәлде лаклау.* ■ *Тәгәрмәс, күсәрҙең күп ере эшләнгәндәр таҡтанан, [уларҙы] заводтағы эшселәр буяп шыма лаклаған.* Ғ. Ғүмәр.

**ЛАКЛЫ** *с.* Лак яғылған йәки һөртөлгән, лакланған. *Лаклы итек. Лаклы шкаф.* ■ *Иркә .. кисәгә иң якшы күлдәген, бейек үксәле ҡара лаклы босоножкаһын кейеп килгән.* Ә. Вәли. *[Бүлмәлә] ялтыр ҡара һоро лаклы яҙыу өҫтәле.* З. Биишева.

**ЛА́КМУС** [*рус.* ⟨ *гол.*] *и.* Диңгеҙ лишайнигынан яһалған, кислота тәьҫирендә — ҡыҙыл, һелте иретмәһендә күк төҫкә ингән буяҡ. *Лакмус буяғы.* **Лакмус ҡағыҙы** лакмус иретмәһе һеңдерелгән ҡағыҙ (һелтелә һәм кислотала реактив итеп ҡулланыла).

**ЛАКОНИ́ЗМ** [*рус.* ⟨ *гр.*] *и.* Һүҙҙәге ыҡсымлыҡ, ҡыҫҡалыҡ. *Лаконизмға миҫал итеп мәкәләрҙе .. күрһәтергә мөмкин.* К. Әхмәтйәнов.

**ЛАКОНИК** *с.* Ыҡсым, ҡыҫҡа итеп әйтелгән. *Лаконик телмәр.*

**ЛАКТА́ЦИЯ** [*рус.* ⟨ *лат.*] *и.* *физиол.* Һөт биҙҙәренең һауым биреше һәм һауым биргән осор.

**ЛАКТО́МЕТР** [*рус.* ⟨ *лат.*] *и.* Һөттөң сифатын ҡуйылығына ҡарап билдәләй торған прибор. *Һөттөң ҡуйылығы лактометр менән үлсәнә.*

**ЛАКТОСКО́П** [*рус.* ⟨ *лат.*] *и.* Һөттөң ҡуйылығын билдәләй торған прибор.

**ЛАҠАБЫЙ** *с.* *диал.* Мәрәкә, ҡыҙыҡлы. *Лаҡабый һүҙ әйтеү.*

**ЛАҠАН** *и.* **1.** Ҙур ағас тәпән. *Бер лаҡан һыу.* ■ *Ишектән ингәс тә мейес эргәһендә лаҡан! Унда йыуынтыҡ туп-тулы.* Ғ. Хәйри.

**2.** *күсм.* Ауыр кәүҙәле кеше. *Бөтә эште беҙҙән эшләтеп, Ғизелбанат үҙе тик ултырмаҡсы. Бер көн тегене.., әйҙә төш, ит лаҡаны, бергә эшләйек тип, карауатынан һөйрәнем дә төшөрҙөм.* И. Ғиззәтуллин.

**ЛАҠАШЫУ** *ҡ.* *диал.* Ҡаҡашыу. *[Рәхимә:] Ана ҡалай бысранып, лаҡашып бөткән, сусҡа бала.* Һ. Дәүләтшина.

**ЛАҠ-ЛАҠ** *и.* *диал.* Өкө.

**ЛАҠЫЙ** *с.* Йүнләп эшләмәй, гел ҡоро һүҙ һөйләп йөрөүсән. *Лаҡый кеше.*

**ЛАҠЫЛДАҠ** *с.* Һөйләүгә әүәҫ, күп һөйләүсән. *Лаҡылдаҡ кеше.*

**ЛАҠЫЛДАТЫУ** *ҡ.* *йөкм.* *ҡар.* **лаҡылдау.** *Ниңә шуны лаҡылдатып ултыраһың, ҡыу ҙа сығар.*

**ЛАҠЫЛДАУ** *ҡ.* *һөйл.* Күп һөйләү. *Лаҡылдап ултырыу.* ■ *[Бисә:] Кит, ҡарт убыр, юҡты лаҡылдама.* Д. Исламов. *Йыйылыштағылар ҡул саба. Сабырҙар шул — дөрөҫөн һөйләйем бит.. Бер ҙә бушты лаҡылдамайым.* З. Биишева.

**ЛАҠЫЛДАШЫУ** *ҡ.* *урт.* *ҡар.* **лаҡылдау.** *Лаҡылдашып гәп һатыу. Лаҡылдашып ултырыу.*

**ЛАҠЫМ** *и.* Алыҫтан һыу кеүек леберләп күренгән һауа тулҡыны. *Тауҙар алыҫта, лаҡым эсендә күгәреп ята.* Ғ. Ибраһим-Ҡысаҡ.

**ЛАЛ** [*фарс.*] *и.* *иҫк.* *кит.* Ал, ҡыҙыл төҫтәге аҫыл таш.

**ЛАЛӘ** *и.* *ҡар.* **ләлә.**

**ЛАМА** [1] [*тиб.*] *и.* Тибет менән Монголиялағы будда монахы.

**ЛА́МА** [2] [*рус.* ⟨ *исп.*] *и.* Дөйәләр ғаиләһенә ҡараған үркәсһеҙ Көньяҡ Америка хайуаны.

**ЛАМБУҠ** [*рус.* нанбук] *и.* Сатинға оҡшатып һуғылған ныҡ ашлы тауар. *[Үмәр:] Бынауһы бер ҡара нәмә, ламбуҡ тиһән, ебе эрерәк, ни тип атайҙарҙыр инде.. Үҙемә кәзәкейгә булыр тип алты аршын алдым.* Һ. Дәүләтшина.

**ЛА́МПА** [*рус.* ⟨ *фр.*] *и.* **1.** Яҡтырта торған төрлө төҙөлөшлө прибор; шәм. *Кәрәсин лампаһы. Өҫтәл лампаһы. Электр лампаһы.*

**2.** Төрлө эш өсөн махсус маҡсат менән эшләнгән прибор. *Йәбештергес лампа. Электрон лампаһы.*

♦ **Вольфрам лампаһы** яҡтылыҡ сығынағы вольфрам һ. б. кеүек тиҙ ирееп бармаған металдың ток менән ҡыҙған сымы булған электр лампаһы. **Кварц лампаһы** ультрафиолет нур сағылдырған бәләкәй кварц көпшә рәүешендәге электр лампаһы. **Көн яҡтылы лампа** яҡтылыҡ сығанағы ток тәьҫирендә көндөҙгө яҡты һымаҡ янған газ булған электр лампаһы.

**ЛАМПА́С** [*рус.* ⟨ *фр.*] *и.* Салбарҙың ике яҡ йөйө буйлатып баҫҡан бер йәки ике һыҙатлы таҫма. *Генерал лампасы. Ҡаймалы лампас. Ҡыҙыл лампас.* ■ *Егеттәрҙең йәшкелт гимнастеркалары ла ҡырынан ҡыҙыл лампас йөгөрткән зәңгәр салбарҙары ла кәүҙәләренә килешеп, йәм биреп тора.* Д. Исламов.

**ЛАМПАСЛЫ** *с.* Лампас баҫҡан. *Лампаслы салбар.* ■ *Йәрмөхәмәтов әүәле башҡорт дивизияһында хеҙмәт иткән һәм кавалерияны үтә яратҡанға әле лә лампаслы салбар кейеп йөрөй.* М. Кәрим.

**ЛАМПАСЫЙ** [*рус.* монпансье ⟨ *фр.*] *и.* Шәкәр менән емеш һутынан эшләнгән ҡаты кәнфит. *[Сәхипгәрәй — Ғәлиәгә:] Ҡустәнәскә бер мөйөш сәй төр. Аҙыраҡ йөҙөм еләге, лампасый ал.* И. Ғиззәтуллин.

**ЛА́МПОЧКА** [*рус.*] *и.* Ток тәьҫирендә ҡыҙған сымдан яҡтылыҡ биргән быяла баллон. *Лампочканы патронға бороу. Янған лампочка.* ■ *Беҙҙең бүлмәләге лампочканы алғандар ҙа коридорға ҡуйғандар.* С. Агиш. *Сағыу яҡтылы лампочка һүнгәс кенә белделәр — яҡтыра башлаған.* Ф. Иҫәнғолов.

**ЛАНГЕ́Т** [*рус.* ⟨ *фр.*] *и.* Йоҡа ғына итеп телеп ҡурған ит.

**ЛАНДША́ФТ** [*рус.* ⟨ *нем.*] *и.* **1.** *геогр.* Ер өҫтөнөң үҙенә генә хас рельефы, климаты, тупрағы, үҫемлек һәм хайуандар донъяһы булған бер өлөшө. *Тау ландшафты. Тундра ландшафты. Үҙән ландшафты.* ■ *Көньяҡ Уралдың ландафты ифрат матур.* Д. Бураҡаев.

**2.** *иҫк.* Урындың дөйөм күренеше, һүрәтләнеше; пейзаж. *Түбәнге Ағиҙел буйындағы ландшафты йыш ултырған колхоз ауылдарынан башҡа күҙ алдына килтереүе ҡыйын.* М. Хисмәтов.

**3.** *иҫк.* Тәбиғәтте һүрәтләгән сәнғәт әҫәре, һүрәт.

**ЛАНКЫ** *и.* *иҫк.* Төрлө төҫтәге буй-буй тауар. // *Ланкы кәзәкей. Ланкы сапан.*

**ЛАНОЛИ́Н** [*рус.* ⟨ *лат.*] *и.* Һарыҡ йөнөн йыуғанда алына торған һарғылт май. *Ланолин һабыны. Ланолин кремы.*

**ЛАНЦЕ́Т** [*рус.* ⟨ *фр.*] *и.* Хирургияла ҡулланыла торған ике яғы ла үткер осло бысаҡ.

**ЛАНЬ** [*рус.*] *и.* Боландар ғаиләһенә ингән ыҡсым матур кәүҙәле йүгерек хайуан.

**ЛАҢ** [*фарс.*] *и.* Артыҡ йөк булып ауырлыҡ килтергән нәмә; ауыр йөк.

**ЛАҢҠ-ЛАҢҠ** *оҡш.* Эт өргән тауышты белдергән һүҙ. *Лаңҡ-лаңҡ итеү. Лаңҡ-лаңҡ өрөү.*

**ЛАҢҠЫЛДАҠ** *с.* **1.** Күп өрөүсән. *Лаңҡылдаҡ эт.*

**2.** *күсм.* *кәмһ.* Һәр саҡ өрөп торған эт һымаҡ күп һөйләүсән. *Лаңҡылдаҡ кеше.*

**ЛАҢҠЫЛДАТЫУ** *ҡ.* *йөкм.* *ҡар.* **лаңҡылдау.** *Этеңде лаңҡылдатып өрҙөрәһең дә тораһың.*

**ЛАҢҠЫЛДАУ** *ҡ.* **1.** Теңкәгә тейеп, өҙлөкһөҙ өрөү (этҡә ҡарата). *Байҙың хеҙмәтселәренән кемдер этте әрләй: «Эй, йүнһеҙ! Мәлһеҙ шулай лаңҡылдайҙарҙыр шул. Көнөн-төнөн маҙа килтереп ни!»* Я. Хамматов.

**ЛАКОНИК** *с.* Ыҡсым, ҡыҫҡа итеп әйтелгән. *Лаконик телмәр.*

**ЛАКТА́ЦИЯ** [*рус.* ⟨ *лат.*] *и.* *физиол.* Һөт биҙҙәренең һауым биреше һәм һауым биргән осор.

**ЛАКТО́МЕТР** [*рус.* ⟨ *лат.*] *и.* Һөттөң сифатын ҡуйылығына ҡарап билдәләй торған прибор. *Һөттөң ҡуйылығы лактометр менән үлсәнә.*

**ЛАКТОСКО́П** [*рус.* ⟨ *лат.*] *и.* Һөттөң ҡуйылығын билдәләй торған прибор.

**ЛАҠАБЫЙ** *с.* *диал.* Мәрәкә, ҡыҙыҡлы. *Лаҡабый һүҙ әйтеү.*

**ЛАҠАН** *и.* **1.** Ҙур ағас тәпән. *Бер лаҡан һыу.* ■ *Ишектән ингәс тә мейес эргәһендә лаҡан! Унда йыуынтыҡ туп-тулы.* Ғ. Хәйри.

**2.** *күсм.* Ауыр кәүҙәле кеше. *Бөтә эште беҙҙән эшләтеп, Ғизелбанат үҙе тик ултырмаҡсы. Бер көн тегене.., әйҙә төш, ит лаҡаны, бергә эшләйек тип, карауатынан һөйрәнем дә төшөрҙөм.* И. Ғиззәтуллин.

**ЛАҠАШЫУ** *ҡ.* *диал.* Ҡаҡашыу. *[Рәхимә:] Ана ҡалай бысранып, лаҡашып бөткән, суска бала.* Һ. Дәүләтшина.

**ЛАҠ-ЛАҠ** *и.* *диал.* Өкө.

**ЛАҠЫЙ** *с.* Йүнләп эшләмәй, гел ҡоро һүҙ һөйләп йөрөүсән. *Лаҡый кеше.*

**ЛАҠЫЛДАҠ** *с.* Һөйләүгә әүәҫ, күп һөйләүсән. *Лаҡылдаҡ кеше.*

**ЛАҠЫЛДАТЫУ** *ҡ.* *йөкм.* *ҡар.* **лаҡылдау.** *Ниңә шуны лаҡылдатып ултыраһың, ҡыу ҙа сығар.*

**ЛАҠЫЛДАУ** *ҡ.* *һөйл.* Күп һөйләү. *Лаҡылдап ултырыу.* ■ *[Бисә:] Кит, карт убыр, юҡты лаҡылдама.* Д. Исламов. *Йыйылыштағылар ҡул саба. Сабырҙар шул — дөрөҫөн һөйләйем бит.. Бер ҙә буштыы лаҡылдамайым.* З. Биишева.

**ЛАҠЫЛДАШЫУ** *ҡ.* *урт.* *ҡар.* **лаҡылдау.** *Лаҡылдашып гәп һатыу. Лаҡылдашып ултырыу.*

**ЛАҠЫМ** *и.* Алыҫтан һыу кеүек леберләп күренгән һауа тулҡыны. *Тауҙар алыҫта, лаҡым эсендә күгәреп ята.* Ғ. Ибраһим-Ҡысаҡ.

**ЛАЛ** [*фарс.*] *и.* *иҫк.* *кит.* Ал, ҡыҙыл төҫтәге аҫыл таш.

**ЛАЛӘ** *и.* *ҡар.* **ләлә.**

**ЛАМА** [1] [*тиб.*] *и.* Тибет менән Монголиялағы будда монахы.

**ЛА́МА** [2] [*рус.* ⟨ *исп.*] *и.* Дөйәләр ғаиләһенә ҡараған үркәсһеҙ Көньяҡ Америка хайуаны.

**ЛАМБУҠ** [*рус.* нанбук] *и.* Сатинға оҡшатып һуғылған ныҡ ашлы тауар. *[Үмәр:] Бынауһы бер ҡара нәмә, ламбуҡ тиһән, ебе эрерәк, ни тип атайҙарҙыр инде.. Үҙемә кәзәкейгә булыр тип алты аршын алдым.* Һ. Дәүләтшина.

**ЛА́МПА** [*рус.* ⟨ *фр.*] *и.* **1.** Яҡтырта торған төрлө төҙөләшлә прибор; шәм. *Кәрәсин лампаһы. Өҫтәл лампаһы. Электр лампаһы.*

**2.** Төрлө эш өсөн махсус маҡсат менән эшләнгән прибор. *Йәбештергес лампа. Электрон лампаһы.*

♦ **Вольфрам лампаһы** яҡтылыҡ сығынағы вольфрам һ. б. кеүек тиҙ иреп бармаған металдың ток менән ҡыҙған сымы булған электр лампаһы. **Кварц лампаһы** ультрафиолет нур сағылдырған бәләкәй кварц көпшә рәүешендәге электр лампаһы. **Көн яҡтылы лампа** яҡтылыҡ сығанағы ток тәьҫирендә көндөҙгө яҡты һымаҡ янған газ булған электр лампаһы.

**ЛАМПА́С** [*рус.* ⟨ *фр.*] *и.* Салбарҙың ике яҡ йөйө буйлатып баҫҡан бер йәки ике һыҙатлы таҫма. *Генерал лампасы. Ҡаймалы лампас. Ҡыҙыл лампас.* ■ *Егеттәрҙең йәшкелт гимнастеркалары ла ҡырынан ҡыҙыл лампас йөгөрткән зәңгәр салбарҙары ла кәүҙәләренә килешеп, йәм биреп тора.* Д. Исламов.

**ЛАМПАСЛЫ** *с.* Лампас баҫҡан. *Лампаслы салбар.* ■ *Йәрмөхәмәтов әүәле башҡорт дивизияһында хеҙмәт иткән һәм кавалерияны үтә яратҡанға әле лә лампаслы салбар кейеп йөрөй.* М. Кәрим.

**ЛАМПАСЫЙ** [*рус.* монпансье ⟨ *фр.*] *и.* Шәкәр менән емеш һутынан эшләнгән ҡаты кәнфит. *[Сәхипгәрәй — Ғәлиәгә:] Күстәнәскә бер мөйөш сәй төр. Аҙыраҡ йөҙөм еләге, лампасый ал.* И. Ғиззәтуллин.

**ЛА́МПОЧКА** [*рус.*] *и.* Ток тәьҫирендә ҡыҙған сымдан яҡтылыҡ биргән быяла баллон. *Лампочканы патронға бороу. Янған лампочка.* ■ *Беҙҙең бүлмәләге лампочканы алғандар ҙа коридорға ҡуйғандар.* С. Агиш. *Сағыу яҡтылы лампочка һүнгәс кенә белделәр — яҡтыра башлаған.* Ф. Иҫәнғолов.

**ЛАНГЕ́Т** [*рус.* ⟨ *фр.*] *и.* Йоҡа ғына итеп телеп ҡурған ит.

**ЛАНДША́ФТ** [*рус.* ⟨ *нем.*] *и.* **1.** *геогр.* Ер өҫтөнөң үҙенә генә хас рельефы, климаты, тупрағы, үҫемлек һәм хайуандар донъяһы булған бер өлөшө. *Тау ландшафты. Тундра ландшафты. Үҙән ландшафты.* ■ *Көньяҡ Уралдың ландафты ифрат матур.* Д. Бураҡаев.

**2.** *иҫк.* Урындың дөйөм күренеше, һүрәтләнеше; пейзаж. *Түбәнге Ағиҙел буйындағы ландшафты йыш ултырған колхоз ауылдарынан башҡа күҙ алдына килтереүе ҡыйын.* М. Хисмәтов.

**3.** *иҫк.* Тәбиғәтте һүрәтләгән сәнғәт әҫәре, һүрәт.

**ЛАНКЫ** *и.* *иҫк.* Төрлө төҫтәге буй-буй тауар. // *Ланкы кәзәкей. Ланкы сапан.*

**ЛАНОЛИ́Н** [*рус.* ⟨ *лат.*] *и.* Һарыҡ йөнөн йыуғанда алына торған һарғылт май. *Ланолин һабыны. Ланолин кремы.*

**ЛАНЦЕ́Т** [*рус.* ⟨ *фр.*] *и.* Хирургияла ҡулланыла торған ике яғы ла үткер осло бысаҡ.

**ЛАНЬ** [*рус.*] *и.* Боландар ғаиләһенә ингән ыҡсым матур кәүҙәле йүгерек хайуан.

**ЛАҢ** [*фарс.*] *и.* Артыҡ йөк булып ауырлыҡ килтергән нәмә; ауыр йөк.

**ЛАҢҠ-ЛАҢҠ** *оҡш.* Эт өргән тауышты белдергән һүҙ. *Лаңҡ-лаңҡ итеү. Лаңҡ-лаңҡ өрөү.*

**ЛАҢҠЫЛДАҠ** *с.* **1.** Күп өрөүсән. *Лаңҡылдаҡ эт.*

**2.** *күсм.* *кәмһ.* Һәр саҡ өрөп торған эт һымаҡ күп һөйләүсән. *Лаңҡылдаҡ кеше.*

**ЛАҢҠЫЛДАТЫУ** *ҡ.* *йөкм.* *ҡар.* **лаңҡылдау.** *Этеңде лаңҡылдатып өрҙөрәһең дә тораһың.*

**ЛАҢҠЫЛДАУ** *ҡ.* **1.** Теңкәгә тейеп, өҙлөкһөҙ өрөү (эткә ҡарата). *Байҙың хеҙмәтселәренән кемдер этте әрләй: «Эй, йүнһеҙ! Мәлһеҙ шулай лаңҡылдайҙарҙыр шул. Көнөн-төнөн маҙа килтереп ни!»* Я. Хамматов.

**2.** *күсм. кәмһ.* Күп һөйләү.— *Күпме лаңкылдарға мөмкин! Тый телеңде!* Я. Хамматов.

**ЛАҢКЫЛДАШЫУ** *к. урт. кар.* **лаңкылдау.** *Лаңкылдашып башты ауыртырып бөттөләр.*

**ЛАҢ-ЛОҢ** *окш.* Күмәк кеше геүләп һөйләшкән тауышты белдергән һүҙ. *Лаң-лоң килеү.*

**ЛАП** *окш.* Йомшағыраҡ ҙур нәмә килеп төшкәндә йәки һуғылғанда һ. б. сыҡҡан тауышты белдергән һүҙ. *Лап итеү. Лап итеп килеп ултырыу.* ■ *Кеше, йәнһеҙ нәмә кеүек, лап итеп йығылды. Уның күлдәге йыртылып бөткән, сәсе туҙған.* Б. Хәсән. *Бер заман сылбыр осо шартлап китеп, төштө Иблес ергә лап итеп.* Ш. Бабич.

**ЛАПАЙЫУ** *к. һөйл.* Киң урын алыу, иркенләү; лапшайыу. *Лапайып ултырыу.*

**ЛАПАЙЫШЫУ** *к. урт. кар.* **лапайыу.** *Лапайышып ултырыу.*

**ЛАПАҠ** *с.* **1.** Йәйенке һәм тәпәшәк. *Лапаҡ кына һарай. // Лапаҡ күренеү. Лапаҡ ятыу.* ■ *Һирәк тәҙрәле, лапаҡ кына, ләкин оҙон, тыштан карағанда ла шөкәтһеҙ барак күренде.* Н. Ҡәрип. *Сыр яланғас лапаҡ тауҙар сәсен алдырған кеше һымаҡ булып тора.* Ж. Кейекбаев.

**2.** Ҡыҫҡа буйлы, йыуан. *Лапаҡ кеше.*

♦ **Лапаҡ өй** ҡыйыҡһыҙ өй. *Февраль бураны ауылды .. күмеп ташлаған. Лапаҡ өйҙәрҙең мөрйәһе генә күренә.* З. Биишева. *Бигерәк таныш миңә ошо урам, таныш миңә бынау лапаҡ өй.* В. Әхмәҙиев.

**ЛАПАЛДЫШ** *с. диал.* Тәпәшәк.

**ЛАПАҪ** *и.* Ҡыйыҡ ҡуймай тушәп ябылған тирә-яғы асыҡ кәртә. *Лапаҫ башы.* ■ *Ғариф ағай .. атын туғарҙы һәм лапаҫ аҫтына ҡуйып, бесәнгә ҡушты.* Б. Бикбай. / Ҡар, ямғырҙан ҡасырып, арба, сана кеүек нәмәләрҙе индереп ҡуя торған тирә-яғы ҡаплаулы япма. *Пожар лапаҫы.* ■ *Арыш тейәгән машиналар бер-бер артлы лапаҫ аҫтына ҡайта башлағас, Аҡназаров көшөл эргәһенә килде.* Ә. Вәли. *Снаряжениеларҙы ҡояштан һаҡлау өсөн лапаҫтар, аттарға һоло бирер өсөн улаҡтар эшләнде.* С. Әлибаев.

**ЛАПАШТЫРЫУ** *к. һөйл.* Бөтә иңенә, яҫылығына йәйелтеү. *Лапаштырып һалыу. Лапаштыра һуғыу.*

**ЛАПАШЫУ** *к. һөйл.* Ергә һеңешкән кеүек йәйелеү. *Лапаштырып һалыу. Лапаштыра һуғыу.*

**ЛАПАШЫУ** *к. һөйл.* Ергә һеңешкән кеүек йәйелеү. *Лапашып ултырыу. Тапап һалынмаған кәбән лапаша.*

**ЛАП-ЛАП, лап та лап** *окш.* Ҡабат-ҡабат лап иткән тауышты белдергән һүҙ. *Лап-лап баҫыу. Лап-лап итеү.* ■ *Өлкән ҡанаттарын лап-лап ҡағып, бөркөттәр осоп үтә.* Ғ. Ғүмәр. *Айыу йөрөй лап-лап, йәшел елканы һаҡлап.* Ә. Ихсан. *Бер заман күҙ етеү менән имән әкәләләре бешеп, сыҫҡан ояларына лап та лап килеп төшә, ти* (Әкиәттән).

**ЛАП-ЛОП, лап та лоп** *окш.* Ҡабат-ҡабат лап итеп төшөп, һуғылғанда сыҡҡан тауышты белдергән һүҙ. *Лап-лоп атлау. Лап-лоп бәрелеү. Лап-лоп һуғылыу.* ■ *[Булат:] Тишеккә башымды тығып ҡына өлгөрҙөм, лап-лоп аяҡ тауышы ишетелде.* К. Кинйәбулатова. *Эй төшә Иблес, төшә зыр килеп, .. ҡулдары лап-лоп итә ыласын кеүек.* Ш. Бабич.

**ЛАПРАЙЫУ** *к.* Тарбайып ҡүтәрелеп, йәйелеү. *Ат ҡуҙғалағы лапрайып үҫеп киткән.*

**ЛАПТА́** [*рус.*] *и. кар.* **сәпәмә** [1].

**ЛАПТЫРЛАҠ** *и.* Тырпысаға еп урай торған ҡулайлама.

**ЛАПТЫРЛАТЫУ** *к.* Лаптыр-лоптор иттереү, лаптыр-лоптор килтереү. *Лаптырлатып ҙур итек кейеп алған.*

**ЛАПТЫРЛАУ** *к.* Лаптыр-лоптор итеү, лаптыр-лоптор килеү. *Лаптырлап атлап үтеп китте.*

**ЛАПТЫРЛАШЫУ** *к. урт. кар.* **лаптырлау.**

**ЛАПТЫР-ЛОПТОР** *окш.* Ҙур аяҡ кейемен һөйрәп атлағанда сыҡҡан тауышты белдергән һүҙ. ■ *Рифкәт, лаптыр-лоптор дүрт аяҡлап ярға үрмәләне.* Ф. Иҫәнғолов.

**ЛАПШАЙТЫУ** *к.* Киңлеккә йәйелдереү, йәйенке төҫ биреү, йәлпәштереү. *Аяҡ кейемен кейеп, лапшайтып бөтөрөү.*

**ЛАПШАЙЫУ** *к.* Киңлеккә йәйелеү, йәйенке төҫ алыу, йәлпәшеү. *Лапшайып бөткән бүрек.* ■ *Тиҙҙән сәллә урынына лапшайып бөткән картуз .. кейәсәген уйлап, [Вахиттың] йөрәге ҡалтыранып китте.* М. Ғафури.

**ЛАПШАЙЫШЫУ** *к. урт. кар.* **лапшайыу.** *Лапшайышып төшөү.*

**ЛАПШЫҠ** *с.* Лапшайып төшкән һимеҙ тәнле, яй хәрәкәтле; былҡы.

● *Һимеҙ ат артыҡ туйһа, лапшыҡ булыр.* Мәҡәл.

**ЛАПШЫРЛАТЫУ** *к.* Лапшыр-лопшор иттереү, лапшыр-лопшор килтереү. *Лапшырлатып һыу кисеү. Тиреҫтең һары һыуы тулған итеге менән лапшырлата баҫып, Ғәбделхәкимов йөрөй.* Я. Вәлиев.

**ЛАПШЫРЛАУ** *к.* Лапшыр-лопшор итеү, лапшыр-лопшор килеү. *Кейемдәре лапшырлап торған йөҙләгән кеше яр буйындағы йәшел үләнгә ултырҙы.* Ғ. Ғүмәр.

**ЛАПШЫР-ЛОПШОР** *окш.* Лыс һыу кейем менән атлағанда сыҡҡан тауышты белдергән һүҙ. *Лапшыр-лопшор атлау. Лашыр-лопшор һыу кисеү.*

**ЛАПШЫУ** *к. һөйл.* Ныҡ арыуҙан быуынһыҙланыу, хәлдән тайыу. *Дошмандан ҡасып, юл яҙҙырып .. күпме ауыр юл үттеләр. Аттары лапшып, үҙҙәре тамам йонсоп бөттө.* Ғ. Хөсәйенов.

**ЛАПЫ** *и.* **1.** Һай ергә тығылып ятҡан бүрәнәләр өйөмө. *Һыу быуылған яҡҡа һаман ағас йыйыла, өҫтө-өҫтөнә өйөлә, ҙурая, оҙоная, ҡайһы саҡтарҙа яртышар километрға һуҙыла. Быны шул инде лапы тигәндәре.* Ғ. Ғүмәр. *Йылғаның тар урынына бер бүрәнә арҡыры ятҡан да шуға үрҙән төшкән башҡалары төртөлөп лапы барлыҡҡа килгән.* Ф. Иҫәнғолов.

**2.** Ауған ағастар, ботаҡтар, яҙғы ташҡындан ҡалған сүп-сарҙар өйөмө. *Бер өйкөм тал ҡороған. Аяҡ аҫтында лапы булып ята.* Й. Солтанов. *Тауыштан ҡото осоп, яҡындағы лапы аҫтынан ҡуян сығып ҡасты.* Н. Мусин.

**ЛАПЫЛАУ** *к. диал.* Болартыу. *Өйҙө лапылау.*

**ЛАПЫЛДАТЫУ** *к.* **1.** Лап-лоп иттереү, лап-лоп килтереү. *Лапылдатып атлау.* ■ *Ҡыҙ төҫө,*

*бите, бөтә кәүҙәһе менән үпкә белдереп, ҙур быймалары менән лапылдата баҫып сығып китте.* Н. Ҡотдосов.

**2.** *күсм.* Күп һөйләргә юл ҡуйыу. *Лапылдатма әле шул радиоңды.*

**ЛАПЫЛДАУ** *к.* **1.** Лап-лоп итеү, лап-лоп килеү. *Вәхитовтың итек өҫтөнән кейгән калушы бушаҡ — атлаған һайын лапылдап бара.* М. Тажи. *Ҡайҙандар .. лапылдап әйләнгән һыу тирмәненең тауышы килә.* И. Насыри.

**2.** *күсм.* Күп һөйләү. *Лапылдап ултырыу.*

**ЛАПЫЛДАШЫУ** *к. урт. кар.* **лапылдау.** *Лапылдашып төшөү. Лапылдашып ултырыу.* ■ *... Китаптар лапылдашып иҙәнгә төштө.* Ә. Байрамов. *Уңды-һулды белмәй лапылдашып ултырған алтмышлап кеше бер юлы шып туктаны.* Ғ. Дәүләтшин.

**ЛАПЫЛЫҠ** *и.* **1.** Йылға үҙәненә бүрәнә тығылған урын. *Лапылыктан йылға аша сыҡтым.*

**2.** Ағас күп йығылған, ботаҡтар өйөлөп ятҡан урын. *Бабай лапылыкты бүҫелдерә баҫып, йылға ситенә үтә.* Й. Солтанов.

**3.** *диал.* Шырлыҡ. *Ҡомалаҡ сыбығы үрмәләгән ҡуйы лапылыҡтар аша йыртҡыс януар һуҡмактары буйлап был ҡатын көн һайын алға атланы.* И. Ғиззәтуллин.

**ЛАПЫШ** *с. кар.* **лапшыҡ.**

**ЛАР** [*рус.* ларь] *и.* Аҙыҡ-түлек, ашлыҡ, он һәм башҡа нәмә һалыу өсөн ҡулланылған ҙур таҡта һандыҡ; әрйә. *Ҡатын-ҡыҙ ер баштарына ҙур-ҙур ларҙар ултыртып, шуларға үҙәк ырҙын табағынан автомашина менән минераль ашлама ташыны.* Т. Килмөхәмәтов.

**ЛАРЁК** [*рус.*] *и.* Ваҡ-төйәк һата торған бәләкәй магазин. *Күсмә ларек.* ■ *Рәхмәтулла магазинға инеп, үҙенә кәрәкле тауарҙарҙы ала ла ларегында һата.* С. Агиш.

**ЛАРҠАЙЫУ** *к.* Һимеҙлеккә сыҙай алмау. *Анау кеше ҡайһылай ларкайып ултыра.*

**ЛАР-ЛОР** *окш.* **1.** Яр һалып баҡырған һыйыр, һарыҡ тауышын белдергән һүҙ. *Лар-лор баҡырыу. Лар-лор килеү.*

**2.** *күсм.* Ҡысҡырып һөйләп, ғауғалап йөрөгән кеше тауышын белдергән һүҙ. *Лар-лор итеү. Лар-лор килеү. Лар-лор һөйләшеү.* ■ *Хәйҙәровка фашистарҙың тамаҡ төбө менән лар-лор ҡысҡырыуҙары .. ишетелеп тора.* Ә. Ихсан.

**ЛАРҪ** *окш.* **1.** Оло эттең өргән тауышын белдергән һүҙ. *Ларҫ итеү.* ■ *Ҙур ялбыр ҡара эт, уҫал күҙҙәрен алартып, осло тештәрен ыржайтып, ларҫ итеп өрөп ҡапыл уға [Айбулатҡа] ташланды.* Һ. Дәүләтшина.

**2.** Бик үк ҡаты булмаған ҙур ауыр нәмә ауғанда сыҡҡан тауышты белдергән һүҙ; гөрҫ. *[Мин айыуға] тәрәп тигәндәй атып ебәрҙем. Ларҫ итеп йығылды ла үлде.* Н. Мусин. *Ғәмилә ларҫ итеп урынға барып ятып, иренә һыйынды.* Б. Бикбай.

**ЛАРҪ-ЛОРҪ** *окш.* Оло эт оҙаҡ итеп өргән тауышты белдергән һүҙ. *Ларҫ-лорҫ итеү. Ларҫ-лорҫ өрөү.* ■ *Төндә йөрөгән ниндәй һәптән был тип муйнаҡтар ларҫ-лорҫ өрөп тороп ҡалдылар.* Б. Вәлит.

**ЛАРҺЫЛДАТЫУ** *к. йөкм. кар.* **ларһылдау.**

**ЛАРҺЫЛДАУ** *к.* **1.** Ларҫ-лорҫ өрөү. *Төн тымырыҡ. Тик Ыласын ҡарттың муйнағы, ниңәлер биҙаланып, ларһылдап өрә.* Т. Хәйбуллин.

**2.** *күсм. һөйл.* Әрләп, ҡысҡырыныу.

**ЛАРЫЛДАҠ** *с.* **1.** Гел генә баҡырып тороусан. *Ларылдаҡ һыйыр.*

**2.** *күсм.* Һәр ваҡыт ҡысҡырып һөйләп, ғауғалап йөрөүсән. *Ларылдаҡ кеше.*

**ЛАРЫЛДАТЫУ** *к. йөкм. кар.* **ларылдау.**

**ЛАРЫЛДАУ** *к.* **1.** Лар-лор килеү (һыйыр, һарыҡҡа ҡарата).

**2.** *күсм.* Өҙләкһеҙ ҡысҡырып һөйләү, ғауғалау. *Ларылдап һөйләшеү.* ■ *Бандиттар аҡырышты. Уларҙың ларылдауын еңеп, урам баҡсаһы аша йәштәр тауышы ишетелде.* Һ. Дәүләтшина.

**ЛАРЫЛДАШЫУ** *к. урт. кар.* **ларылдау.**

**ЛАС** *окш.* Йәбешкәк, һыулы нәмәне иҙәнгә, ҡаты ергә бәргәндә, түкөргәндә сыҡҡан тауышты белдергән һүҙ. *Лас итеү.* ■ *Убырлы ҡарсыҡ ергә лас иттереп бер төкөрһә — эт була, бер ҡаҡырһа — килеһап була* (Әкиәттән).

◆ **Лас йәбешеү** 1) үҙле, һыулы иҙмә нимәгәлер нык һылашыу. *Балсыҡ стенаға лас йәбеште;* 2) *диал.* сат йәбешеү. *Кукурузға һыйыр лас йәбешә.*

**ЛАСҠ** *окш.* Йәбешкәк, һыулы нәмәне бәргәндә йәки иҙгәндә, төкөргәндә сыҡҡан тауышты белдергән һүҙ. *Ласҡ итеү. Ласҡ иттереү.*

**ЛАСҠ-ЛАСҠ** *окш.* Ҡабат-ҡабат ласҡ иткән тауышты белдергән һүҙ. *Ласҡ-ласҡ килеү. Ласҡ-ласҡ итеү.*

**ЛАСҠ-ЛОСҠ** *окш.* Оҙаҡ ваҡыт ласҡ иткән тауышты белдергән һүҙ. *Ласҡ-лосҡ атлау. Ласҡ-лосҡ итеү. Ласҡ-лосҡ килеү.*

**ЛАСҠЫЛДАТЫУ** *к.* Ласҡ-ласҡ иттереү, ласҡ-лосҡ иттереү; ласҡ-лосҡ килтереү. *Ласҡылдатып батҡаҡ кисеү. Ласҡылдата төкөрөү.* ■ *[Салиха:] Кейәүгә бирерлек ҡыҙ булғанһың, ласҡылдатып һағыҙ сәйнәп йөрөмәҫһең инде.* Ж. Кейекбаев.

**ЛАСҠЫЛДАУ** *к.* Ласҡ-ласҡ итеү, ласҡ-лосҡ килеү. *Аяҡ аҫты бысраҡ, ласҡылдап ята.*

**ЛАСЛАМА: ласлама һыу** бик нык һыу; лыс һыу. *Ташҡын шәбәйгәс, һыу күпер өҫтөнә һирпелеп ята. Аяҡ аҫты ласлама һыу була.* М. Тажи.

**ЛАС-ЛАС** *окш.* Ҡабат-ҡабат лас иткән тауышты белдергән һүҙ. *Лас-лас сәйнәү. Лас-лас һуғыу.* ■ *[Сәйфелмөлөк] бер туктауһыҙ .. лас-лас һағыҙ сәйнәй.* З. Ғәлимов.

**ЛАСЛАТЫУ** *к.* Лас иттереү. *Бригадир ҡулын һелтәп, асыуынан ласлата төкөрөп ҡуйҙы.* Б. Бикбай.

**ЛАС-ЛОС** *окш.* Оҙаҡ ваҡыт лас иткән тауышты белдергән һүҙ. *Лас-лос ашау. Лас-лос атлау. Лас-лос итеү.* ■ *Яңырак яуған яҙғы епшек ҡарҙан лас-лос баҫып килгән Нәфисә, ирҙәрҙе күреп, шып туктаны.* Я. Хамматов. *Аяҡтарын алмашлап баҫҡан һайын Зыяның .. сабаталары лас-лос килә ине.* М. Тажи.

**ЛАСТ** *окш. кар.* **лас.** *Мәгүзә ласт иттереп Фатиманың битенә төкөрҙө.* Б. Бикбай.

**ЛАСТА** [*рус.* ласты] *и. кар.* **йөҙгөс.** *Аяҡҡа ласта кейеү.*

**ЛАСТ-ЛАСТ** *окш. кар.* **лас-лас.**

**ЛАСТ-ЛОСТ** *окш.* Оҙаҡ ваҡыт ласт иткән тауышты белдергән һүҙ. *Ласт-лост итеү. Ласт-*

*бите, бөтә кәүҙәһе менән үпкә белдереп, ҙур быймалары менән лапылдата баҫып сығып китте.* Н. Ҡотдосов.

**2.** *күсм.* Күп һөйләргә юл ҡуйыу. *Лапылдатма әле шул радионды.*

**ЛАПЫЛДАУ** *ҡ.* **1.** Лап-лоп итеү, лап-лоп килеү. *Вәхитовтың итек өҫтөнән кейгән калушы бушаҡ — атлаған һайын лапылдап бара.* М. Тажи. *Ҡайҙандар .. лапылдап әйләнгән һыу тирмәненең тауышы килә.* И. Насыри.

**2.** *күсм.* Күп һөйләү. *Лапылдап ултырыу.*

**ЛАПЫЛДАШЫУ** *ҡ. урт. ҡар.* **лапылдау.** *Лапылдашып төшөү. Лапылдашып ултырыу.* ■ *... Китаптар лапылдашып иҙәнгә төштө.* Ә. Байрамов. *Уңды-һулды белмәй лапылдашып ултырған алтмышлап кеше бер юлы шып туҡтаны.* Ғ. Дәүләтшин.

**ЛАПЫЛЫҠ** *и.* **1.** Йылға үҙәненә бүрәнә тығылған урын. *Лапылыҡтан йылға аша сыҡтым.*

**2.** Ағас күп йығылған, ботаҡтар өйөлөп ятҡан урын. *Бабай лапылыҡты бүҫелдерә баҫып, йылға ситенә үтә.* Й. Солтанов.

**3.** *диал.* Шырлыҡ. *Ҡомалаҡ сыбығы үрмәләгән ҡуйы лапылыҡтар аша йыртҡыс януар һуҡмаҡтары буйлап был ҡатын көн һайын алға атланы.* И. Ғиззәтуллин.

**ЛАПЫШ** *с. ҡар.* **лапшыҡ.**

**ЛАР** [*рус.* ларь] *и.* Аҙыҡ-түлек, ашлыҡ, он һәм башҡа нәмә һалыу өсөн ҡулланылған ҙур таҡта һандыҡ; әрйә. *Ҡатын-ҡыҙ ер баштарына ҙур-ҙур ларҙар ултыртып, шуларға үҙәк ырҙын табағынан автомашина менән минераль ашлама ташыны.* Т. Килмөхәмәтов.

**ЛАРЁК** [*рус.*] *и.* Ваҡ-төйәк һата торған бәләкәй магазин. *Күсмә ларек.* ■ *Рәхмәтулла магазинға инеп, үҙенә кәрәкле тауарҙарҙы ала ла ларегында һата.* С. Агиш.

**ЛАРҠАЙЫУ** *ҡ.* Һимеҙлеккә сыҙай алмау. *Анау кеше ҡайһылай ларҡайып ултыра.*

**ЛАР-ЛОР** *окш.* **1.** Яр һалып баҡырған һыйыр, һарыҡ тауышын белдергән һүҙ. *Лар-лор баҡырыу. Лар-лор килеү.*

**2.** *күсм.* Ҡысҡырып һөйләп, ғауғалап йөрөгән кеше тауышын белдергән һүҙ. *Лар-лор итеү. Лар-лор килеү. Лар-лор һөйләшеү.* ■ *Хәйҙәровка фашистарҙың тамаҡ төбө менән лар-лор ҡысҡырыуҙары .. ишетелеп тора.* Ә. Ихсан.

**ЛАРҪ** *окш.* **1.** Оло эттең өргән тауышын белдергән һүҙ. *Ларҫ итеү.* ■ *Ҙур ялбыр ҡара эт, үҫал күҙҙәрен алартып, осло тештәрен ыржайтып, ларҫ итеп өрөп ҡапыл уға [Айбулатҡа] ташланды.* Һ. Дәүләтшина.

**2.** Бик үк ҡаты булмаған ҙур ауыр нәмә ауғанда сыҡҡан тауышты белдергән һүҙ; гөрҫ. *[Мин айыуға] терәп тигәндәй атып ебәрҙем. Ларҫ итеп йығылды ла үлде.* Н. Мусин. *Ғәмилә ларҫ итеп урынға барып ятып, иренә һыйынды.* Б. Бикбай.

**ЛАРҪ-ЛОРҪ** *окш.* Оло эт оҙаҡ итеп өргән тауышты белдергән һүҙ. *Ларҫ-лорҫ итеү. Ларҫ-лорҫ өрөү.* ■ *Төндә йөрөгән ниндәй һәптән был тип муйнаҡтар ларҫ-лорҫ өрөп тороп калдылар.* Б. Вәлит.

**ЛАРҺЫЛДАТЫУ** *ҡ. йөкм. ҡар.* **ларһылдау.**

**ЛАРҺЫЛДАУ** *ҡ.* **1.** Ларҫ-лорҫ өрөү. *Төн тымырыҡ. Тик Ыласын ҡарттың муйнағы, ниңәлер биҙәланып, ларһылдап өрә.* Т. Хәйбуллин.

**2.** *күсм. һөйл.* Эрләп, ҡысҡырыныу.

**ЛАРЫЛДАҠ** *с.* **1.** Гел генә баҡырып тороусан. *Ларылдаҡ һыйыр.*

**2.** *күсм.* Һәр ваҡыт ҡысҡырып һөйләп, ғауғалап йөрөүсән. *Ларылдаҡ кеше.*

**ЛАРЫЛДАТЫУ** *ҡ. йөкм. ҡар.* **ларылдау.**

**ЛАРЫЛДАУ** *ҡ.* **1.** Лар-лор килеү (һыйыр, һарыҡҡа ҡарата).

**2.** *күсм.* Өҙлөкһөҙ ҡысҡырып һөйләү, ғауғалау. *Ларылдап һөйләшеү.* ■ *Бандиттар аҡырышты. Уларҙың ларылдауын еңеп, урам баҡсаһы аша йәштәр тауышы ишетелде.* Һ. Дәүләтшина.

**ЛАРЫЛДАШЫУ** *ҡ. урт. ҡар.* **ларылдау.**

**ЛАС** *окш.* Йәбешкәк, һыулы нәмәне иҙәнгә, ҡаты ергә бәргәндә, түкҡәндә сыҡҡан тауышты белдергән һүҙ. *Лас итеү.* ■ *Убырлы ҡарсыҡ ергә лас иттереп бер түкөрһә — эт була, бер ҡаҡырһа — килеһап була* (Әкиәттән).

◆ **Лас йәбешеү** 1) үҙле, һыулы иҙмә нимәгәлер нык һылашыу. *Балсыҡ стенаға лас йәбеште;* 2) *диал.* сат йәбешеү. *Кукурузға һыйыр лас йәбешә.*

**ЛАСҠ** *окш.* Йәбешкәк, һыулы нәмәне бәргәндә йәки иҙгәндә, түкөргәндә сыҡҡан тауышты белдергән һүҙ. *Ласҡ итеү. Ласҡ иттереү.*

**ЛАСҠ-ЛАСҠ** *окш.* Ҡабат-ҡабат ласҡ иткән тауышты белдергән һүҙ. *Ласҡ-ласҡ килеү. Ласҡ-ласҡ итеү.*

**ЛАСҠ-ЛОСҠ** *окш.* Оҙаҡ ваҡыт ласҡ иткән тауышты белдергән һүҙ. *Ласҡ-лосҡ атлау. Ласҡ-лосҡ итеү. Ласҡ-лосҡ килеү.*

**ЛАСҠЫЛДАТЫУ** *ҡ.* Ласҡ-ласҡ иттереү, ласҡ-лосҡ иттереү; ласҡ-лосҡ килтереү. *Ласҡылдатып батҡаҡ кисеү. Ласҡылдата түкөрөү.* ■ *[Салиха:] Кейәүгә бирерлек ҡыҙ булғанһың, ласҡылдатып һағыҙ сәйнәп йөрөмәҫһең инде.* Ж. Кейекбаев.

**ЛАСҠЫЛДАУ** *ҡ.* Ласҡ-ласҡ итеү, ласҡ-лосҡ килеү. *Аяҡ аҫты быҫраҡ, ласҡылдап ята.*

**ЛАСЛАМА: ласлама һыу** бик нык һыу; лыс һыу. *Ташҡын шәбәйгәс, һыу күпер өҫтөнә һирпелеп ята. Аяҡ аҫты ласлама һыу була.* М. Тажи.

**ЛАС-ЛАС** *окш.* Ҡабат-ҡабат лас иткән тауышты белдергән һүҙ. *Лас-лас сәйнәү. Лас-лас һуғыу.* ■ *[Сәйфелмөлөк] бер туҡтауһыҙ .. лас-лас һағыҙ сәйнәй.* З. Ғәлимов.

**ЛАСЛАТЫУ** *ҡ.* Лас иттереү. *Бригадир ҡулын һелтәп, асыуынан ласлата түкөрөп ҡуйҙы.* Б. Бикбай.

**ЛАС-ЛОС** *окш.* Оҙаҡ ваҡыт лас иткән тауышты белдергән һүҙ. *Лас-лос ашау. Лас-лос атлау. Лас-лос итеү.* ■ *Яңыраҡ яуған яҙғы епшек ҡарҙан лас-лос баҫып килгән Нәфисә, ирҙәрҙе күреп, шып туҡтаны.* Я. Хамматов. *Аяҡтарын алмашлап баҫҡан һайын Зыяның .. сабаталары лас-лос килә ине.* М. Тажи.

**ЛАСТ** *окш. ҡар.* **лас.** *Мәгүзә ласт иттереп Фатиманың битенә түкөрҙө.* Б. Бикбай.

**ЛАСТА** [*рус.* ласты] *и. ҡар.* **йөҙгөс.** *Аяҡҡа ласта кейеү.*

**ЛАСТ-ЛАСТ** *окш. ҡар.* **лас-лас.**

**ЛАСТ-ЛОСТ** *окш.* Оҙаҡ ваҡыт ласт иткән тауышты белдергән һүҙ. *Ласт-лост итеү. Ласт-*

*-лост килеү.* ■ *Аяҡ аҫты ласт-лост итеп тора. Өҫтән ҡар ҡатыш ямғыр яуа.* Х. Ғиләжев.

**ЛАСТЫЛДАТЫУ** *ҡ.* Ласт-ласт иттереү; ласт--лост килтереү. *Эт ластылдатып һурпа ялай.* С. Кулибай.

**ЛАСТЫЛДАУ** *ҡ.* Ласт итеү, ласт-ласт килтеү. *Аяҡ аҫты баҫҡан һайын ластылдап ята.*

**ЛАСТЫР-ЛОСТОР** *окш.* Һыуҙы, батҡаҡты кискәндә сыҡҡан тауышты белдергән һүҙ. *Ластыр-лостор төшөп китеү.* ■ *Төн ҡараңғы. Ҡарлы-боҙло ямғыр яуа. Аяҡ аҫты батҡаҡ.. Ҡайһыбыҙ быйма, ҡайһыбыҙ сабата кейгән, ластыр-лостор баҫып барабыҙ.* Ғ. Кәримов. *Урамдарҙан киләм ластыр-лостор.* К. Кинйәбулатова.

**ЛАҪБЫР** *с.* **1.** Оҙон, ҡуйы йөнлө; ялбыр. *Лаҫбыр эт. Лаҫбыр тун.* ■ *Көтөүенән айырылып сыҡҡан бер бәпкәне лаҫбыр һары эт баҫтырып килгәнен иң тәүҙә Сабирйән күреп алды.* М. Хәйҙәров.

**2.** Ялбырап торған, тарбаҡай. *Дим буйы һине сакыра. Әйҙә .. уның тулҡындарын ярып кәмәлә йөҙ, һикереп комло ярҙарына баҫ. Лаҫбыр таллыҡтарына инеп юғал.* М. Ғәли. / *күсм.* Ҡабарып, ялбырлап торған [болотҡа ҡарата]. *Дауыл еле менән тулап-ҡайнап лаҫбыр болот килә.* М. Ғәли.

**ЛАҪПАҢЛАУ** *ҡ.* Туҙғып, тарбаҡайланыу (үҫемлеккә ҡарата); ялбырлау. *Киләһе йылдарҙа уға [тарыға] юл йәнә киңерәк асыласаҡ: ул башҡа культуралар менән бер рәттән үҙен тиң тотоп, лаҫпаңлап ултырасаҡ.* Р. Низамов.

**ЛА́ТЕКС** [*рус.* ⟨*лат.*] *и.* Каучук, гуттаперча өсөн сырьё хеҙмәтен үтәгән үҫемлектәрҙән алына торған һөт һымаҡ һут. *Тәбиғи латекс. Синтетик латекс. Яһалма латекс. Каучук латексы.*

**ЛАТИН** *и.* **1.** Боронғо Италияның Лациума өлкәһендә йәшәгән халыҡ. *Латин алфавиты. Латин теле. Латин культураһы.*

**2.** Егерменсе йылдар аҙағынан ҡырҡынсы йылға хәтле башҡорт телендә ҡулланылған алфавит. *Латин таныу.* ■ *Ғизитдин ағай .. латинды бер аҙ һуҡаларға өйрәнгән.* Д. Исламов.

**ЛАТИНЛАШТЫРЫЛЫУ** *ҡ. төш. ҡар.* **латинлаштырыу.** *Латинлаштырылған алфавит.*

**ЛАТИНЛАШТЫРЫУ** *ҡ.* Яҙманы латин алфавитына күсереү. *Алфавитты латинлаштырыу.*

**ЛАТИНСА** *р.* Латин телендә. *Латинса аңлашыу. Латинса уҡыу.*

**ЛАТИНСЫЛЫҠ** *и.* 20-се йылдарҙа ғәрәп алфавитынан латинға күсеү яғында торған ижтимағи ағым. *Латинсылыҡ хәрәкәте. Латинсылыҡ шауҡымы.*

**ЛАТИФ** [*ғәр.*]. *с.* **1.** Яғымлы, һөйкөмлө, гүзәл, матур; иркә. *Латиф ел.* ■ *Йәйҙең йылы, матур ҡояшы латиф нурҙарын һәр нәмәгә бер тигеҙ һибә.* Ф. Вәлиев. *Изге таң! Байрам таңы!.. Ул латиф алһыу күгең дә — ниндәй сикһеҙ, ниндәй ҙур?!* Б. Мирзанов. *Төҙәлә ҡыш буйы арыған, зәгиф тәндәр латиф йәйҙә.* Ғ. Иҫәнбирҙин.

**2.** (*баш хәреф менән*) Ир-ат исеме.

♦ **Латиф тән** (*йәки* **кәүҙә**) матди булмаған рухани зат. *Латиф кәүҙәң нурҙа йөҙгән кеүек, иләҫ-миләҫ итә алдымда.* Х. Ғәбитов.

**ЛАТИФА** [*ғәр.*] *и. иҫк. кит.* **1.** Тапҡыр һүҙ, көләмәс. *Ғәббәс мулла ҡатыны илә берлектә рәхәт-рәхәт һөйләшеп, латифалар әйтешеп .. ултырыр ине.* Р. Фәхретдинов.

**2.** (*баш хәреф менән*) Ҡатын-ҡыҙ исеме.

**ЛАТЛАУ** [*рус.* латать] *ҡ. диал.* Йүнәтеү. *Тирмәнкәйҙәр еңел ҡулдан кәмә латлап бирҙеләр.* Д. Юлтый.

**ЛАТЫШ** *и.* Латыш республикаһының төп халҡын тәшкил иткән милләт һәм шул милләттең бер кешеһе. *Латыш халҡы. Латыш ҡатыны. Латыш теле.*

**ЛАТЫШСА** *р.* **1.** Латыш телендә. *Латышса уҡыу. Латышса һөйләшеү.*

**2.** Латыштар кеүек. *Латышса бейеү. Латышса кейенеү.*

**ЛАУ** *окш.* **1.** Ғауғалап, шаулап өргән эт тауышын белдергән һүҙ. *Эте сыҡты лау өрөп, һалдат сыҡты йүгереп* (Һамаҡтан).

**2.** *и. мәғ. күсм.* Көслө шау-шыулы тауыш. *Лау итеү.* ■ *Йәмле яҙҙа һандуғас, һәр төрлө ҡош һайрауҙары, саз ине йәш күңелемә һәр бер тәбиғәт лауҙары.* Д. Юлтый.

**ЛАУЛАТЫУ** [1] *ҡ. йөкм. ҡар.* **лаулау** [1] 1. *Этте лаулатыу.*

**ЛАУЛАТЫУ** [2] *ҡ.* Ныҡ ялҡынландырыу. *Бер етеҙ малай лаулатып усаҡ утын өргөләй.* М. Тажи.

**ЛАУЛАУ** [1] *ҡ.* **1.** Лау-лау итеү (этҡә ҡарата). *Көн дә лаулап өргән Алабай ҙа .. бөгәрләнеп ята тын ғына.* Т. Йәнәби.

**2.** *күсм.* Ныҡ шаулау, шау-шыу итеү. *Ҡапҡанан лаулап Бәҙекәй әбей килеп инде.* С. Агиш.

**ЛАУЛАУ** [2] *ҡ.*Ныҡ ялҡынланып, геүләү; ләүкеү. *Фашист өңө лаулап, сайрап янһа, күк таҙарыр һөрөм, төтөндән.* М. Тажи.

**ЛАУ-ЛАУ** *окш.* **1.** Ғауғалап, шаулап өргән эт тауышын белдергән һүҙ. *Лау-лау өрөү.*

**2.** *и. мәғ күсм.* Көслө шау-шыу.— *Иллә, лау-лау тип, исемде белмәй ҡушмағандар был Шоғайға.* С. Агиш.

**ЛАУЛЫ** *с.* Шау-шыулы; тауышлы. *[Яҙыусы] үҙен әйләндереп алған лаулы тормошто мөбәләғә тәшбиһтәр менән кәүҙәләндерергә тырыша, унда реализм аҙ, әммә уның төбөндә яҡшы теләк бар.* Д. Юлтый.

**ЛАУЛЫЙ** *с.* Туҙған ялбыр сәсле. *Лаулый баш.*

**ЛАУРЕА́Т** [*рус.* ⟨*лат.*] *и.* Фән, сәнғәт һәм әҙәбиәт өлкәһендәге ҙур хеҙмәт өсөн бирелә торған дәрәжә һәм шул дәрәжәне алған кеше. *Ленин премияһы лауреаты. Салауат премияһы лауреаты. Пианистарҙың халыҡ-ара конкурсы лауреаты.* ■ *[Тайфур — Алмасовка:] Рәхим ит, бына ошо инде Гөлсәсәк, минең партнёршам. .. Ике конкурс лауреатыбыҙ.* Ш. Бикҡол.

**ЛАУРЕАТЛЫҠ** *и.* Лауреат исеме.

**ЛАУЫЛДАҠ** *с.* Ҡысҡырып, шаулап барыусан. *Лауылдаҡ кеше.*

**ЛАУЫЛДАУ** *ҡ.* **1.** Лау-лау итеү, лау-лау килеү (этҡә ҡарата).

**2.** *күсм.* Тауыш күтәреү, шау-шыу килеү. *Лауылдап йөрөү.* ■ *[Ҡатын:] Лауылдап тик торалар, бер ҙә ишетеп булмай.* Т. Баишев.— *Минеке һәйбәт, минекен ал,— тип лауылдай башлай алма һатыусылар.* Р. Солтангәрәев.

**ЛАУЫЛДАШЫУ** *ҡ. урт. ҡар.* **лауылдау.**— *Кәнишнә алдаша! Гөнаһһыҙ кешенең өҫтөнә быс-*

*рак ыргытырга нисек оялмай,— тип барыһы ла лауылдашты.* В. Нафиков.

**ЛАУЫР** *и.* **1.** Ҡып-ҡыҙыл булып сурайып, эренләп аҡҡан муйын шешеге; ҡылауыр. *Лауыры аҙған.*

**2** (*йәки* **лауыр үләне**) Шул ауырыуҙан дауа итеп ҡулланылған оҙонса аҡһыл йәшел япраҡлы үлән. *Лауыр йәй көсөкләй. Ирҙәргә иркәгән, ҡатын-ҡыҙга сәскә атканын алабыҙ.*

**ЛАФ** [*фарс.*] *и.* Маҡтансыҡ буш һүҙ. *Океандагы ҡайһы бер сит илдәр яңы һугыш теләп лаф орҙолар.* Ә. Харисов. **Лаф ороу** маҡтаныш, ҡабартып һөйләү; шапырыныу. *[Мазһар — Бикмәткә:] Йыйылыш яһаганда, һин кәпрәйҙең, армияга китеү беҙҙең өсөн ҡыуаныс, тигән булып лаф орҙоң бит.* С. Агиш.

● *Лаф менән былау бешмәс.* Мәҡәл.

**ЛАФЁТ** [*рус.* ⟨ *фр.*] *и.* **1.** Туп ҡуя торған станок. *Йөрөмәле (күсмә) лафет. Стационар лафет. Ярым стационар лафет. Орудие лафеты. Лафетка ҡуйыу.*

**2.** Тағылма урғыс машина. *Урғыстың эше тиҙ генә йәйланманы, оҙаҡ көйләнеләр. Шунан һуң гына лафет үҙенең артынан сабылган тигеҙ яҫмалар ҡалдырып, алга шыуҙы.* Я. Хамматов. *Игендең бер бөртөгөн дә әрәм итмәйәсәкбеҙ. Бөтә лафеттарга ла башаҡ күтәргестәр ҡуябыҙ.* Р. Ғабдрахманов.

**ЛАФЕТЛЫ** *с.* Лафетҡа (2 мәғ.) тағылған. *М. Мөхәмәтуллин былтыр лафетлы урғыста 600 гектарга яҡын иген урҙы.* Ғ. Рамазанов.

**ЛАФЕТСЫ** *и.* Лафет менән ашлыҡ урыусы.

**ЛАШМАН** [*гәр.*] *и. тар.* **1.** Беренсе донъя һуғышы ваҡытында тыл хеҙмәтен үтәгән ғәскәр. *Порт-Артур тигән таш ҡала тороп ҡалды дошманга.. Ҡараптары ҡыйратылгас, батырҙар ҡалды лашманга* (Бәйеттән).

**2.** Хеҙмәттән һәм һалымдан бушатылып, ҡараптар төҙөүгә ағас ҡырҡҡан дәүләт крәҫтиәне. *Лашманга ебәрелеү ҙә еңел түгел. Унда киткәндәр ҡарап яһау өсөн ҡара урман эсенән сыҡмай агас ҡырҡа.* Ғ. Ибраһимов.

**ЛАШМАНСЫ** *и. тар.* Лашман хеҙмәтен үтәп йөрөгән кеше.

**ЛАШМАНСЫЛЫҠ** *и. тар.* Лашман хеҙмәте. *[Татар, мишәр, мукшы, сыуаш, мари] Ҡазан ягынан меңәрләп килеп, элек үҙҙәренә һалынган душ налогынан, лашмансылыҡтан, рекрут биреүҙән ҡотолоу йәки уларҙы аҙайтыу өсөн яҙыла.* Ғ. Фәхретдинов.

**ЛАШПАЙЫУ** *ҡ. диал.* Лапшайыу. *Лашпайган бүрек. Лашпайган портфель.*

**ЛАШПЫРЛАТЫУ** *ҡ.* Лашпыр-лошпор иттереү, лашпыр-лошпор килтереү. *Лашпырлатып һыу кисеү.*

**ЛАШПЫРЛАУ** *ҡ.* Лашпыр-лошпор итеү, лашпыр-лошпор килеү. *Аяҡ аҫты лашпырлап ятҡан һыу.*

**ЛАШПЫР-ЛОШПОР** *оҡш.* Кейем менән һыу кискәндә йәки лыс һыу кейем менән барғанда сыҡҡан тауышты белдергән һүҙ. *Лашпыр-лошпор атлау. Лашпыр-лошпор итеү. Лашпыр-лошпор килеү.*

**ЛАШТЫРЛАТЫУ** *ҡ.* Лаштыр-лоштор иттереү, лаштыр-лоштор килтереү. *Ул ара булмай лаштырлата баҫып, Бибисара абыстай килеп инде.* З. Биишева.

**ЛАШТЫРЛАУ** *ҡ.* Лаштыр-лоштор итеү, лаштыр-лоштор килеү. *Лаштырлап атлау. Лыс һыу кейеме атлаганда лаштырлап тора.*

**ЛАШТЫРЛАШЫУ** *ҡ. урт. ҡар.* **лаштырлау.**

**ЛАШТЫР-ЛОШТОР** *оҡш.* Лыс һыу кейем менән барғанда йәки ҙур йомшаҡ аяҡ кейемен һөйрәп атлағанда сыҡҡан тауышты белдергән һүҙ. *[Ғәфиәт:] Һиңә рәхәт тә ул! Ә бына миңә быймам менән лаштыр-лоштор һаҙ кисеп ҡайтырга кәрәк.* Ф. Иҫәнғолов. *[Ҡотлой] сәй әҙерләне, лаштыр-лоштор баҫып, самауыр килтереп ҡуйҙы.* Ғ. Ғүмәр.

**ЛАЯҠЫЛ** [*гәр.*] *р.* Аҡылды юйғанса, аҡылды юғалтҡанса. *Лаяҡыл иҫереү.* ■ *[Торналар] тарыны ашап алгас, балды һыу тип эскән-эскән дә лаяҡыл иҫерешеп йыгылган* (Әкиәттән).

□ **Лаяҡыл булыу** бик ныҡ иҫереү, аҡылды юйғанса иҫереү.

**ЛАЯҠЫН** *р. диал.* Лаяҡыл. *Лаяҡын иҫереү.*

**ЛЕБЁДКА** [*рус.*] *и.* Йөктө күтәрә йәки урындан урынға күсерә торған сығырлы машина. *Күсмә лебедка. Стационар лебедка. Электр лебедкаһы.* ■ *Забойщик ҡаҙыган тимер тейәлгән вагонетканы лебедка ярҙамында өҫкә күтәрәләр.* Р. Низамов.

**ЛЕБЁДЧИК** [*рус.*] *и.* Лебедка менән эш иткән кеше.

**ЛЕБЕР-ЛЕБЕР** *оҡш.* Саҡ-саҡ ҡына һиҙелерлек тулҡынлы хәрәкәтте белдергән һүҙ. *Лебер-лебер итеү. Лебер-лебер килеү.*

**ЛЕБЕРЛӘТЕҮ** *ҡ.* Лебер-лебер иттереү, лебер-лебер килтереү.

**ЛЕБЕРЛӘҮ** *ҡ.* **1.** Лебер-лебер итеү, лебер-лебер килеү. *Асыҡ тәҙрәнән әкрен генә иҫкән елгә тәҙрә ҡормаһы леберләп тора.* Б. Бикбай. *Йәйге эҫе көн. Ҡалҡыу урындарҙа һауа күкләйәшелле булып леберләп тора.* Т. Морат. / Саҡ ҡына һиҙелерлек ҡалтырау; дерелдәү. *Ғәйзулла бабайҙың һалдауы тек итеп кенә ҡала. Һалдауын һыуҙан күтәрһә, уның теше араһында ҡарыш ҙурлыҡ бәрҙе леберләп тора.* Н. Мусин.

**2.** Ҡалтырап, йыш-йыш тибеү (йөрәккә ҡарата); өлпөлдәү. *Шундай саҡта йөрәк әллә нишләй, елп-елп итеп кенә леберләй.* Ғ. Ғүмәр.

**ЛЕБЕРЛӘШЕҮ** *ҡ. урт. ҡар.* **леберләү.** *Томбойоҡ араһындагы был кескәй сөмбәйҙә әле лә, моғайын, ҡарыш ҙурлыҡ бәрҙеләр леберләшеп яталыр.* Н. Мусин.

**ЛЕГАЛЛЕК** *и.* Закон ҡушҡан, рөхсәт иткән хәл.

**ЛЕГАЛЛӘШЕҮ** *ҡ.* Асыҡтан-асыҡ эш итергә хоҡуҡ алыу. *Легалләшкән партия.*

**ЛЕГАЛЛӘШТЕРЕЛЕҮ** *ҡ. төш. ҡар.* **легалләшеү.** *Октябрь революцияһынан һуң большевиктар партияһы һәм бөтә эшсе ойошмалар легалләштерелде.*

**ЛЕГАЛЛӘШТЕРЕҮ** *ҡ.* Асыҡтан-асыҡ эш итергә хоҡуҡ биреү. *Партияны легалләштереү. Эшсе ойошмаларҙы легалләштереү.*

**ЛЕГАЛЬ** [*рус.* легальный ⟨ *лат.*] *с.* Закон тыймаған; рөхсәтле. *Легаль газета. Легаль эш. Легаль рәүештә йәшәү.* ■ *Тәрән подполье һәм легаль ойошмалар аша халыҡтың ваҡытлы-*

*са төшкән рухын күтәрергә кәрәк.* Һ. Дәүләтшина.

◆ **Легаль марксизм** 19 быуат аҙағында Россия буржуаз интеллигенцияһы араһында таралған, Россияла капитализм үҫешен нигеҙләү өсөн К. Маркстың экономик тәғлимәтендәге айырым положениеларҙы файҙаланырға тырышҡан ижтимағи-политик ағым. **Легаль марксист** шул ағымды яҡлаған кеше.

**ЛЕГЕ́НДА** [*рус.* ⟨*лат.*] *и.* Ҡасандыр булып үткән йәки булғанға иҫәпләнгән ваҡиғалар нигеҙендә ижад ителгән фольклор әҫәре; риүәйәт, хикәйәт. *Тарихи легенда.* ■ *Тарихи йыр, ҡағиҙә буларак ниндәй ваҡиға, шәхескә бәйле тыуыуы хаҡында һөйләгән легендаһы менән бергә йәшәй.* Р. Бикбаев.

**ЛЕГЕНДАР** [*рус.* легендарный] *с.* Үҙенең әһәмиәте, эше менән халыҡ араһында дан алған. *Легендар батыр.* ■ *Ш. Хоҙайбирҙин Чапаевтың легендар дивизияһында Башвоенкомат вәкиле булып эшләне.* Р. Ҡузыев.

**ЛЕГИО́Н** [*рус.* ⟨*лат.*] *и.* **1.** *тар.* Боронғо Римдағы эре ғәскәри берәмек. *Рим легионы.*

**2.** Ҡайһы бер илдәрҙә айырым маҡсат менән ойошторолған ғәскәр. *Ҡоралды легион.*

**ЛЕГИОНЕ́Р** [*рус.* ⟨ *лат.*] *и. тар.* Легионда хеҙмәт иткән кеше.

**ЛЕГИРЛАНЫУ** *к. төш. кар.* **легирлау.** *Легирланған ҡорос.* ■ *Суйындың структураһын яҡшыртыу маҡсатында цех белгестәре легирланған суйын эшкәртеүҙе үҙләштерҙеләр.* «Совет Башҡортостаны», 1970, 7 март.

**ЛЕГИРЛАУ** [*рус.* легировать ⟨*нем.*] *к.* Билдәле сифаттағы металл алыу өсөн ике төрлө металды ҡушып иретеү. *Ҡоросто легирлау. Легирлаусы элементтар.* **Легирлаусы металл** билдәле бер сифат биреү өсөн иреткән металға ҡушыла торған металл (вольфрам, никель, молибден, марганец, хром һ. б.).

**ЛЕГИРЛЫ** *с.* Билдәле сифат биреү өсөн составына башҡа металл ҡушылған. *Легирлы ҡорос. Легирлы ҡушылмалар.*

**ЛЕ́ЗВИЕ** [*рус.*] *и.* Махсус ҡулайламаға ҡуйып, ҡырына торған ике яғы ла үткер йоҡа бәке. *Бер пачка лезвие.* ■ *[Максим — Богдановка:] Һеҙгә ҡәләм осларға һаҡлап йөрөткән лезвиемды ағасҡа ҡыҫтырып, бынауы соҡорҙағы һыуҙы күҙгә итеп ҡырынып тора инем әле.* Д. Исламов.

**ЛЕЗГИ́Н** *и.* Дағстан менән Әзербайжан халҡының бер өлөшөн тәшкил иткән халыҡ һәм шул халыҡтың бер кешеһе (Кавказ-Иберий телдәренең береһендә һөйләшә). *Лезгин халҡы. Лезгин ҡатыны Лезгин теле.*

**ЛЕЗГИ́НКА** [*рус.*] *и.* Лезгин халҡының бейеүе һәм шуны бейей торған көй. *Лезгинкаға бейеү. Лезгинканы уйнау.*

**ЛЕЙБОРИ́СТ** [*рус.* ⟨*ингл.*] *и.* Англияла, Австралия менән Яңы Зеландияла һ. б. илдәрҙә эшселәр партияһының ағзаһы. *Лейбористар партияһы.*

**ЛЕ́ЙКА** [*рус.*] *и.* Түтәлгә һыу һибә торған моронло күнәк; һиптергес. *Төпкө бер булмәнән лейкаға һыу тултырып алып сыҡтым.* С. Агиш.

**ЛЕЙКОЦИ́Т** [*рус.* ⟨*гр.*] *и. физиол.* Кеше һәм хайуан ҡанындағы төҫһөҙ күҙәнәк.

**ЛЕЙКОЦИТО́З** [*рус.* ⟨*гр.*] *и. мед.* Ҡанда лейкоциттарҙың күбәйеүе.

**ЛЕЙТЕНА́НТ** [*рус.* ⟨*фр.*] *и.* Армияла һәм флотта түбәндән икенсе булған офицерлыҡ дәрәжәһе һәм шул дәрәжәләге кеше. *Лейтенант званиеһы. Лейтенант погоны.* ■ *Лейтенант булып, ғәскәрҙе дошманға ҡаршы илтә.* Р. Ниғмәти. **Кесе лейтенант** иң түбәнге офицерлыҡ дәрәжәһе һәм шул дәрәжәләге кеше. **Өлкән лейтенант** лейтенанттан юғарғы офицерлыҡ дәрәжәһе һәм шул дәрәжәләге кеше.

**ЛЕЙТМОТИ́В** [*рус.* ⟨*нем*] *и.* **1.** *муз.* Музыкаль әҫәрҙә герой образына йәки драматик хәлгә баштан аҙаҡҡа тиклем ҡушылып килеп, был образды, хәлде асырға ярҙам иткән төп мотив. *Салауат Юлаев операһында [З. Исмәғилевтең] оло драматургик һиҙемләй белеү һәләте, персонаждарҙың психологияһын асып бирерлек сағыу музыкаль лейтмотивтар тыуҙыра алыуы күренде.* Н. Сабитов.

**2.** *күсм.* Әҙәби әҫәрҙә ҡабат-ҡабат әйтелеп, һыҙыҡ өҫтөнә алынып килгән төп фекер, үҙәк мотив. *Китаптың лейтмотивы.* ■ *Сеңләүҙә ҡыҙҙың үҙ яҙмышына ҡарата ризаһыҙлыҡ белдереүе лейтмотив булғанлыҡтан, образлы саралырҙың бөтәһе ҡайғылы кисерештәрҙе, ата-әсәнән үтенеү, күҙ йәше менән ялбарыу тойғоларын биреүгә буйһонған.* Ә. Харисов.

**ЛЕКСЕ́МА** [*рус.* ⟨*гр.*] *и. лингв.* Бөтә форма һәм мәғәнәләре менән үҙаллы булған һүҙ берәмеге.

**ЛЕКСИК** *с.* Һүҙгә мөнәсәбәтле, һүҙгә бәйле. *Лексик берәмек. Телдең лексик байлығы. Лексик калька.* ■ *Халыҡтың һөйләү теленән алынған һүҙҙәр яҙыусының әҫәрҙәре аша әҙәби телдең лексик нормаһына инеп китә һәм уны байыҡтыра.* М. Ғималова.

**ЛЕ́КСИКА** [*рус.* ⟨ *гр.*] *и.* Телдең йәки диалекттың бөтә һүҙ байлығы. *Диалект лексикаһы. Әҙәби тел лексикаһы.* ■ *Ике халыҡтың фольклорын, .. этнографияһын, ер-һыу исемдәрен, телен, бигерәк тә лексикаһын өҫтән генә байҡап ҡарау ҙа боронғо башҡорт һәм венгр ҡәбиләләренең ҡәрҙәшлеге хаҡында [күп] материал бирә.* Ж. Кейекбаев. / Берай эш өлкәһендә ҡулланылған һүҙҙәр йыйылмаһы. *Профессиональ лексика.* / Бер авторҙың айырым әҫәрендә йәки ғөмүмән ижадында сағылған һүҙ байлығы. *Р. Ниғмәти лексикаһы.*

**ЛЕКСИКО́ГРАФ** [*рус.*] *и.* Лексикография өлкәһендәге белгес. *Башҡорттарҙың тормошон һәм көнкүрешен ныҡлап өйрәнгән ғалимдарҙың береһе — рус лексикографы һәм яҙыусыһы Владимир Иванович Даль булды.* Ә. Усманов.

**ЛЕКСИКОГРАФИК** *с.* Лексикографияға мөнәсәбәтле, лексикографияға бәйле. *Лексикографик эш.*

**ЛЕКСИКОГРА́ФИЯ** [*рус.* ⟨*гр.*] *и.* Һүҙлектәр төҙөү теорияһы һәм эше. *Лексикографиялағы традициялар.*

**ЛЕКСИКО́ЛОГ** [*рус.*] *и.* Лексикология өлкәһендәге белгес.

**ЛЕКСИКОЛОГИК** *с.* Лексикологияға мөнәсәбәтле, лексикологияға бәйле. *Легсикологик эш.*

**ЛЕКСИКОЛО́ГИЯ** [*рус.* ⟨ *гр.*] *и.* Тел ғилеменең лексиканы өйрәнеү менән шөғөлләнгән бүлеге. *Тарихи лексикология.* ■ *Лексика менән лексикология газәттә конкрет бер телдең һүҙлек составын тикшерә.* Ж. Кейекбаев.

**ЛЕКСИКО́Н** [*рус.* ⟨ *гр.*] *и.* Айырым бер кеше йәки төркөм телендәге һүҙҙәр. *Бай лексикон.* ■ *Яҙыусы үҙенә кәрәк һүҙҙе лексикондан теләгәнсә һайлай ала, ләкин һүҙҙең һөйләм эсендәге урынын .. үҙе теләгәнсә .. үҙгәртергә уның хаҡы юҡ.* Ә. Харисов.

**ЛЕ́КТОР** [*рус.* ⟨ *лат.*] *и.* Лекция уҡыған кеше. *Лекторҙар төркөмө.*

**ЛЕКТО́РИЙ** [*рус.* ⟨ *лат.*] *и.* Асыҡ лекциялар ойоштороу эше менән шөғөлләнгән ойошма һәм шул лекциялар уҡыла торған бина. *„Белем“ йәмғиәтенең үҙәк лекторийы.*

**ЛЕКТОРЛЫҠ** *и.* Лектор эше. *Лекторлыҡ стажы.*

**ЛЕ́КЦИЯ** [*рус.* ⟨ *лат.*] *и.* Юғары уҡыу йортонда уҡытыусының студенттарға фәнде телдән һөйләп биреүе йәки ниндәйҙер теманың халыҡ алдында һөйләнеүе. *Лекциялар циклы. Лекция тыңлау. Лекция уҡыу. Лекция яҙыу.* / Юғары уҡыу йортонда уҡытыусы тарафынан фән итеп һөйләнгән уҡыу дәресе. *Лекцияға йөрөү.* ■ *Тәнзилә лекцияның һуңғы сәғәтен тыңламаны тиерлек: башына бер нәмә лә инмәне уның.* Р. Низамов. **Концертлы лекция** музыкаль темаға арналып, концерт менән бергә алып барылған лекция.

**ЛЕ́ММА** [*рус.* ⟨ *гр.*] *и. мат.* Тик башҡа теорияларҙы иҫбатлау өсөн генә кәрәк булған ярҙамсы теорема.

**ЛЕМУ́Р** [*рус.* ⟨ *лат.*] *и.* Үҫеше яғынан маймылдар менән түбән һөтимәрҙәр араһында торған маймыл һымаҡ хайуан.

**ЛЕНИНИ́ЗМ** [*рус.*] *и.* Империализм йәшәгән һәм пролетар революциялар барған шарттарҙа, пролетариат диктатураһы урынлашҡан һәм социализм менән коммунизм төҙөгән дәүерҙә марксизмды артабан үҫтергән һәм конкретлаштырған В. И. Ленин тәғлимәте. *Күпме йәшәһәк тә беҙ Лениндыҙ, йәшәмәйбеҙ ленинизмһыҙ. Эй, илһамлы, ябай, ихлас телем, мең ҡабатла Ленин исемен.* С. Кулибай.

**ЛЕНИНСА** *р.* Ленин ҡушҡанса; Ленин тәғлимәтенә ярашлы итеп; ленинизм принциптарына таянып.

**ЛЕНИНСЫ** *и.* Ленинизм юлынан барыусы. // *Ленинсы комсомол. Ленинсы партия.* ■ *Бында ғына түгел ленинсылар! Беҙ таралған бөтә илдәргә.* М. Хәй.

**ЛЕНИНСЫЛ** *с.* Ленинизмға мөнәсәбәтле, ленинизм принциптарына нигеҙләнгән. *Ленинсыл милли политика.*

**ЛЕ́НТА** [*рус.* ⟨ *нем.*] *и. кар.* **таҫма.**

**ЛЕНТАЛЫ** *с. кар.* **таҫмалы.**

**ЛЕП** *окш.* Ҡапыл ғына еңелсә булған хәрәкәтте белдергән һүҙ. *Леп итеп һуныу.* ■ *[Алпар:] Минең холҡомдо беләһең бит: бер секундта гөлт итеп ҡабынам да, шунда уҡ леп итеп һүнәм дә ҡуям.* Ҡ. Даян.

**ЛЕПЕЛДӘТЕҮ** *к.* Леп-леп иттереү, леп-леп килтереү. *Лепелдәтеп ҡанат ҡағыу.*

**ЛЕПЕЛДӘҮ** *к.* Леп-леп итеү, леп-леп килеү. *Балаларҙың ҙур бәхетһеҙлек һиҙеп әрнегән кескәй йөрәктәре кемдәндер ярҙам өмөт итеп, ситлектәге сыпсыҡ кеүек лепелдәй ине.* З. Биишева.

**ЛЕПЕР-ЛЕПЕР** *окш.* **1.** Йоҡа яҫы нәмәне тиҙ-тиҙ генә һелкеткәндә сыҡҡан тауышты белдергән һүҙ. *Лепер-лепер итеү.*

**2.** Дер-дер иткән хәрәкәтте белдергән һүҙ. *Лепер-лепер килеү.*

**ЛЕПЕРЛӘТЕҮ** *к.* Лепер-лепер иттереү, лепер-лепер килтереү. *[Фил] дегәнәк япрағынан күп тапҡыр ҙур ҡолағын леперләтеп һелкеп ҡуйҙы.* Ә. Байрамов.

**ЛЕПЕРЛӘҮ** *к.* **1.** Лепер-лепер итеү, лепер-лепер килеү. *Өй эсе һил булып китте. Әкрен генә иҫкән елдең асыҡ тәҙрә ҡормаһын елпетеүе генә леперләп ишетелә.* Б. Бикбай.

**2.** Ваҡ-ваҡ ҡына ҡалтырау; дерелдәү. *Ҡурҡыуымдан йөрәгем леперләп, тәнем ҡалтыранып ҡуйҙы.* Ш. Насыров.

**ЛЕПЕРЛӘШЕҮ** *к. урт. кар.* **леперләү.** *Япраҡтар талғын иҫкән елгә леперләшеп үҙ-ара һөйләшә һымаҡ.* Ә. Атнабаев.

**ЛЕПКӘ** *и.* **1.** Йәш баланың түбә ҡапҡасындағы ҡатып өлгөрмәгән ере. *Бала, бала.. Әйтерһең дә илаһи ул бер нур һибә. Күрәм уның лепкәһендә леп-леп, леп-леп йөрәк тибә.* Н. Нәжми.

**2.** *диал.* Түбә. *Мырҙағол лепкәһенә кәҙәр ялангасланып ҡалған һары маңлайын йыйырып, .. ҡараңғы тәҙрәгә ҡараны.* З. Ғәлимов.

**ЛЕП-ЛЕП** [1] *окш.* **1.** Тиҙ-тиҙ елпенгәндә сыҡҡан нескә тауышты белдергән һүҙ. *Леп-леп итеү.* ■ *Ергә төшкән ҡантуш турғай һымаҡ, япраҡ уйнай леп-леп елберләп.* С. Кулибай. *Леп-леп итеп осҡан күбәләктең ҡанат осҡайҙары түңәрәк* (Халыҡ йырынан).

**2.** Ҡапыл-ҡапыл елп иткән саҡ һиҙелерлек хәрәкәтте белдергән һүҙ. *Баланың ирендәре бер нисә тапҡыр леп-леп итте лә башы бер яҡҡараҡ ҡырын төштө.* М. Тажи. *Леп-леп итеп тулҡынланып китте Сәлимәнең кескәй йөрәге.* Р. Ниғмәти.

**ЛЕП-ЛЕП** [2] *өнд.* Тауыҡты тоторға баҫтырғанда, ятҡырыу өсөн әйтелә торған һүҙ.

**ЛЕПШЕЛДӘҮ** *к.* Һыуланып, йәбешкәкләнеү (ҡарға ҡарата); епшекләнеү. *Лепшелдәп торған .. йылы буранды шиһаҡа бураны йәки аҡман-тоҡман бураны тип йөрөтә карттар.* Ж. Кейекбаев.

**ЛЕР, лер-р-р** *окш.* Һарыҡ-кәзә көтөүе йәки күмәк халыҡ ҡапыл урындан ҡупҡандағы хәрәкәтте йәки тауышты белдергән һүҙ. *Лер-р-р итеп ҡалыу.*

**ЛЕРКЕЛДӘТЕҮ** *к.* Лерк-лерк иттереү, лерк-лерк килтереү. *Леркелдәтә баҫыу.*

**ЛЕРКЕЛДӘҮ** *к.* Лерк-лерк итеү, лерк-лерк килеү. *Леркелдәп тороу.*

**ЛЕРК-ЛЕРК** *окш.* Ҡапыл-ҡапыл тотош һелкенгән хәрәкәтте белдергән һүҙ. *Лерк-лерк итеү.* ■ *Көр ат һәлмәк кенә итеп лерк-лерк юрта.* Ф. Иҫәнғолов. *Ғилман бай бөтә олҡаһын һелкетеп, лерк-лерк көлөп алды.* И. Көҫәпҡол.

**ЛЕРЛӘТЕҮ** *к.* Лер-р иттереп, ҡапыл урынынан ҡуҙғатыу. *Бибеш менән Хисбулла ялан кәртәлә кәзә-һарыҡты лерләтеп ҡыуа-ҡыуа, ҙур аҡ һарыҡты тотто.* З. Биишева.

**ЛЕРЛӘҮ** *к.* Лер-р итеп, ҡапыл урынынан ҡубыу. *Пассажир поезы килдеме, ығы-зығы ҡуба. Дежурный ҡыңғырау ҡаға, лерләп пассажирҙар төшә.* Д. Исламов.

**ЛЕРТ-ЛЕРТ** *окш. кар.* **лурт-лурт.** *Билал ағай .. атының лерт-лерт юртыуына ла, ҡалай сылтырауына ла .. ғәҙәтләнеп бөткән.* Ә. Вәли.

**ЛЕСНИ́К** [*рус.*] *и.* Урман ҡараусыһы.

**ЛЕСНИ́ЧЕСТВО** [*рус.*] *и.* Урман участогы һәм уның идараһы. / Идараның хужалыҡ ҡаралтылары. *Лесничество йылға буйында ине.*

**ЛЕСНИ́ЧИЙ** [*рус.*] *и.* Лесничество мөдире. *Лесничий ярҙамсыһы.*

**ЛЕСОВО́Д** [*рус.*] *и.* Урмансылыҡ белгесе.

**ЛЕСОПИ́ЛКА** [*рус.*] *и.* **1.** *һөйл.* Таҡта ярыу заводы; таҡта яра торған урын, бина. *Лесопилкаға индем.*

**2.** Таҡта ярған машина. *Лесопилка туҡтауһыҙ эшләй.*

**ЛЕСОСЕ́КА** [*рус.*] *и. кар.* **диләнкә.**

**ЛЕСПРОМХО́З** [*рус.*] *и.* Билдәле бер урында ағас әҙерләү, ҡырҡыу һ. б. эштәрҙе башҡарған урман хужалығы. *Бөрйән леспромхозы.*

**ЛЕСХО́З** [*рус.*] Ағас үҫтереү, ағас ҡырҡыу кеүек эштәрҙе башҡарған урман хужалығы. *Лесхоз ҡарамағындағы урман.*

**ЛЕТАРГИК:** **летаргик йоҡо** *кар.* **летаргия.**

**ЛЕТАРГИ́Я** [*рус.* ⟨ *гр.*] *и.* Оҙаҡ ваҡыт бер нәмә белмәй хәрәкәтһеҙ ятып үткәргән йоҡо ауырыуы; мәрт.

**ЛЕ́ТОПИСЬ** [*рус.*] *и.* Боронғо Руста илдә, ҡала йәки башҡа урында йылынығын йылға теркәп барған тарихи яҙма. *Боронғо Русь летопистары. Летопись төҙөү.* ■ *Мөһим ваҡиғалар бер еңкә теҙелә, үҙенә күрә летопись барлыҡҡа килә.* Ә. Усманов. / *күсм.* Нимәнеңдер үҫешендә күренгән айырым яҡты сағылдырған һәр төрлө яҙма. *Революция летописы. Һуғыш летописы.*

♦ **Тере летопись** үҙ замандында барған ваҡиғаларҙы яҡшы хәтерләгән кеше.

**ЛЕТҮ́Н** [*рус.*] *и. кар.* **алағанат.** *[Ямал — ирене:] Һин бит алағанат, летун. бисәңдең елкәһен киметреп ятаһың.* М. Ғәжи.

**ЛЕТҮ́ЧКА** [*рус.*] *и. һөйл.* **1.** Нимәлер тураһында ҡыҫҡаса хәбәр иткән ашығыс яҙыу. *Летучка сығарыу // Летучка газета.*

**2.** Ашығыс бер мәсьәләне тиҙ генә ҡарау өсөн йыйылған йыйылыш. *Өфө журналистарының эшсе көндәрҙә булып үткән дөйөм ҡала летучкаһы радио һәм телевидение эшенә арналды* «Совет Башҡортостаны», 1964, 30 апрель.

**ЛЁТЧИК** [*рус.*] *и.* Самолёт йөрөтөүсе; осоусы. *Хәрби лётчик. Истребитель лётчик. Һынаусы лётчик.*

♦ **СССР-ҙың лётчик-космонавты** космосҡа бик мөһим осош яһаған космонавтарға бирелә торған исем.

**ЛЕҺЕР** *окш.* Кәзә-һарыҡ көтөүе йәки күмәк халыҡ ҡапыл урынынан ҡупҡан хәрәкәтте һәм шул ваҡытта сыҡҡан тауышты белдергән һүҙ. *Леһер итеп ҡалыу.*

**ЛЕҺЕРЛӘТЕҮ** *к.* Леһер иттереү. *Леһерләтеп һарыҡ ҡыуыу.*

**ЛЕҺЕРЛӘҮ** *к.* Леһер итеп, урынынан ҡубыу. *Леһерләп .. бер нисә мең баш ҡуй көтөүе бара.* Һ. Дәүләтшина.

**ЛИА́НА** [*рус.* ⟨ *фр.*] *и.* **1.** Тропик һәм субтропик урмандарҙа үҫә торған сырмалсыҡ ағас.

**2.** *кар.* **сырмалсыҡ** [1].

**ЛИБЕРА́Л** [*рус.* ⟨ *лат.*] *и.* **1.** Либерализм яҡлы кеше. *[Григорий Иванович — халыҡҡа:] Батшаның манифесты — күҙ буяу .. Ул манифесты яҡлаусылар — шул уҡ помещиктарҙың, либералдарҙың ҡойроғо булған кадеттар, эсерҙар, меньшевиктар.* Һ. Дәүләтшина. / Либераль партия ағзаһы.

**2.** *һөйл.* Хөр фекерле кеше. *[Әбүзәров — Хәтимәгә:] Һин — либерал. Улыңдың бер генә китек ағын да күрергә теләмәйһең.* И. Абдуллин.

**ЛИБЕРАЛИ́ЗМ** [*рус.* ⟨ *лат.*] *и.* **1.** Феодал-крепостниклыҡ һәм буржуаз революциялар осоронда буржуазияға ирекле даулаған, уның политик хакимлығы урынлашыу менән реакция яғын яҡлаған идеологик һәм ижтимағи политик йүнәлеш.

**2.** Үтә талапһыҙлыҡ, зарарлы иреклелек.

**3.** *һөйл.* Хуш күңеллелек. *Либерализм күрһәтеү.*

**ЛИБЕРАЛЛАНЫУ** *к.* **1.** Либерализм позицияһына төшөү.

**2.** Талапһыҙлыҡ күрһәтеү, талапһыҙға әйләнеү.

**3.** *һөйл.* Хуш күңеллелек күрһәтеү.

**ЛИБЕРАЛЛЫҠ** *и.* Талапһыҙлыҡ. *Либераллыҡ күрһәтеү.*

**ЛИБЕРАЛЬ** *с.* **1.** Либерализм яҡлы, либерализмға ҡараған. *Либераль буржуазия. Либераль партия. Либераль народник.*

**2.** Талапһыҙ.

**3.** *һөйл.* Хуш күңелле. *Либераль ҡараштар.*

**ЛИБРЕ́ТТО** [*рус.* ⟨ *ит.*] *и.* **1.** Ҙур күләмле музыкаль сәхнә әҫәренең [опера, опереттаның] әҙәби тексы. *З. Исмәғилев башҡорт халыҡ шағиры Мостай Кәрим либреттоһына «Гөлзифа» операһын яҙа.* Р. Сөләймәнов.

**2.** Музыкаль сәхнә әҫәренең театр программаһында яҙылған ҡыҫҡаса тексы. *Либретто яҙыусы. Операның либреттоһы.*

**ЛИ́ВЕР** [*рус.* ⟨ *ингл.*] *и.* Ваҡ итеп тапалған үпкә-бауыр. *Ливер колбасаһы. Ливер бәлеше.*

**ЛИ́ГА** [1] [*рус.* ⟨ *фр.*] *и.* Ижтимағи-политик союз, ойошма.

♦ **Милләттәр лигаһы** беренсе һәм икенсе донъя һуғыштары араһында эшләгән халыҡ-ара дәүләттәр берләшмәһе.

**ЛИ́ГА** [2] [*рус.* ⟨ *ит.*] *и.* Нотаның өҙмәй уйналырға тейешлеген күрһәтеп торған йәйә һымаҡ билдә.

**ЛИГАТҮ́РА** [*рус.* ⟨ *лат.*] *и.* **1.** *махс.* Шыйыҡ йәки ҡаты металға кәрәкле үҙенсәлек биреү өсөн ҡушылған ярҙамсы иретмә.

**2.** *махс.* Аҫыл металдарға кәрәкле үҙенсәлек биреү йәки уларҙан эшләнгән нәмәләрҙең хаҡын кәметеү өсөн ҡушылған металдар.

**3.** Бер яҙма билдә менән ике йәки бер нисә хәрефтең бирелеше.

**4.** *мед.* Операция ваҡытында ҡан тамырын бәй-

ләп ҡуйыу өсөн ҡулланылған ебәк еп. *Лигатура ебе. Лигатура һалыу. Лигатураны алыу.*

**ЛИГАТУРАЛЫ** *с. махс.* Лигатура (1, 2 *мәғ.*) ҡушылған. *Лигатуралы металл. Лигатуралы алтын.*

**ЛИГНИ́Н** [*рус.* 〈 *лат.*] *и.* **1.** *биол.* Ағастағы углеродҡа бай матдә. *Лигнин кислотаһы.*

**2.** Ҡағыҙ һымаҡ йоҡа ағас материал; ағас мамығы.

**ЛИГНИ́Т** [*рус.* 〈 *лат.*] *и. махс.* Түбән сифатлы һоро күмер. *Һоро лигнит күмере.*

**ЛИГРОИ́Н** [*рус.* 〈 *фр.*] *и.* Нефть ҡыуғанда алынған продукттарҙың береһе. *Лигроин нефттән алына.*

**ЛИ́ДЕР** [*рус.* 〈 *ингл.*] *и.* **1.** Партия, профсоюз һәм башҡа ижтимағи төркөмдәр башлығы. *Профсоюз лидерҙары. Социал-демократик партия лидерҙары.* ■ *Көнбайыш пролетариаты өсөн Ленин юлбашсы, лидер булһа, көнсығыш халыҡтары өсөн ул .. нимәһе менәндер юғарыраҡ, .. изге зат.* «Ағиҙел», 1970, № 4.

**2.** Ярышта алда барған кеше. *Лидерҙар төркөмө. Шахмат ярышының лидеры.* ■ *Был осрашыуға тиклем «Торпедо» командаһы 9 очко менән лидер булып барһа, юлаевсылар 6 очко менән турнир таблицаһының бишенсе баҫҡысын биләй ине.* «Совет Башҡортостаны», 1986, 4 февраль.

**ЛИЖНӘК** [*рус.* лежняк] *и. иҫк.* Яһаҡ йыйырға килеп, ашап, эсеп, кәйеф-сафа ҡороп ятҡан кеше. *Беҙҙең Күк Ыҙма йәйләүенә лижнәктәр килеп төштө. Күтәрә алмаҫлыҡ яһаҡ талап итәләр, түләмәһәгеҙ көтөүе менән малығыҙҙы алып китәбеҙ, тиҙәр.* Ш. Шәһәр.

**ЛИЗО́Л** [*рус.* 〈 *гр.*] *и.* Ауыл хужалығында дезинфекция өсөн ҡулланыла торған ҡоңғорт май һымаҡ шыйыҡлыҡ. *3 процентлы лизол иҙелмәһе.*

**ЛИКБЕ́З** [*рус.*] *и.* Совет власының тәүге йылдарында ололарҙы һәм үҫмерҙәрҙе грамотаға өйрәткән мәктәп. *Ғизитдин ағай .. сәсе ағара башлағас ҡына ликбезға йөрөп, латинды бер аҙ һупаларға өйрәнгән.* Д. Исламов. *Әйҙә, иптәштәр, ликбезға, уҡырға кәрәк беҙгә* [Халыҡ йырынан].

**ЛИКВИДА́ТОР** [*рус.*] *и.* Ликвидаторлыҡты яҡлаған кеше. *Эшселәр ликвидаторҙарҙың революцион көрәш урынына реформа юлына баҫыуын күрҙеләр.* «Совет Башҡортостаны», 1969, 7 ғинуар.

**ЛИКВИДАТОРЛЫҠ** *и.* 1907-1910 йылдарҙа РСДРП-ла революцион көрәште кире ҡаҡҡан, пролетариаттың легаль булмаған революцион партияһын юҡ итергә тырышҡан реакцион меньшевистик ағым. *Ликвидаторлыҡҡа ҡаршы көрәш. Ликвидаторлыҡты гәйепләү.*

**ЛИКЁР** [*рус.* 〈 *фр.*] *и.* Ныҡ шәрбәт, иҫерткес ҡаты эсемлек. *Ликер заводы. Ликер ҡайнатыу.*

**ЛИЛИПУ́Т** [*рус.* 〈 *ингл.*] *и.* Буйға бик бәләкәй кеше; иргәйел. *Лилипут кеше.*

**ЛИМА́Н** [*рус.* 〈 *гр.*] *и.* Диңгеҙгә төшкән йылға тамағындағы һай ҡултыҡ. *Ҡырым лимандары. Одесса лимандары.*

**ЛИМИ́Т** [*рус.* 〈 *лат.*] *и.* Файҙаланырға рөхсәт ителгән норма. *Кредит лимиты. Тотоноу лимиты. Лимит ҡуйыу.* ■ *Оборудование техника ебәрелгәндә лимит ҡыҫыла.* И. Абдуллин.

**ЛИМИТЛАНЫУ** *ҡ. төш. ҡар.* **лимитлау.** *Лимитланған тауар.*

**ЛИМИТЛАУ** *ҡ.* Лимит ҡуйыу, сикләү. *Финанс сығымдарын лимитлау.*

**ЛИМИТЛЫ** *с.* Лимит ҡуйылған. *Лимитлы хаҡтар.*

**ЛИМО́Н** [*рус.* 〈 *ит.*] *и.* **1.** Көньяҡта үҫкән мәңге йәшел цитрус емеш ағасы.

**2.** Шул ағастың ҡалын һары ҡабыҡлы, әсе итле өлөшсәләрҙән торған емеше. *Лимон һарылары тамды аҡ сатин күлдәгемә* (Халыҡ йырынан).

♦ **Лимон кислотаһы** лимон һәм ҡайһы бер башҡа үҫемлектәрҙән алына торған химик берләшмә (аҙыҡ промышленносында, медицинала, буяу эшендә һәм башҡа урында ҡулланыла).

**ЛИМОНА́Д** [*рус.* 〈 *фр.*] *и.* Лимон йәки башҡа емеш һуты ҡушылған тәмле алкоголһеҙ эсемлек.

**ЛИМУЗИ́Н** [*рус.* 〈 *фр.*] *и.* Эс яҡтан бүленгән ябыҡ еңел автомобиль кузовы һәм шундай кузовлы автомобиль.

**ЛИ́МФА** [*рус.* 〈 *лат.*] *и.* Умыртҡалыларҙа туҡымалар араһын тултырып, тәндәге бөтә күҙәнәктәр аша үтеп йөрөгән төҫһөҙ шыйыҡлыҡ. *Лимфа төйөнө. Лимфа тамырҙары. Лимфа биҙҙәре.*

**ЛИНГАФО́Н** [*рус.* 〈 *лат.*]: **лингафон кабинеты** ниндәйҙер телде өйрәнеү курсы яҙылған пластинкалар тупланған һәм уҡытыуҙың техник саралары менән йыһазландырылған кабинет. *Өсөнсө мәктәптә .. сит телде өйрәнеү өсөн лингафон кабинеты йыһазландырылған.* «Башҡортостан уҡытыусыһы», 1966, № 8.

**ЛИНГВИ́СТ** *и.* Лингвистика буйынса белгес, телсе. *[Доктор:] Минең атайым лингвист. Ул төрки телдәре буйынса белгес.* И. Абдуллин.

**ЛИНГВИСТИК** *с.* Лингвистикаға мөнәсәбәтле, лингвистикаға бәйле. *Лингвистик анализ. Лингвистик атлас. Лингвистик әҙәбиәт.*

**ЛИНГВИ́СТИКА** [*рус.* 〈 *фр.*] *и.* Тел тураһындағы фән; тел ғилеме.

**ЛИНЕ́ЙКА** [*рус.* 〈 *лат.*] *и.* **1.** Тура һыҙыҡ һыҙа торған үлсәмле планка. *Бүлемле линейка.* / Шул рәүешле иҫәпләгес йәки үлсәгес ҡорал. *Логарифмалы линейка. Масштаблы линейка.*

**2.** *хәрби* Лагерь эсендә тура мөйөшлө кварталдарға бүлгән юлдар селтәренең һәр береһе. *Алғы линейка. Линейка буйлап йөрөү.*

**3.** Бер шеренгалы саф. *Линейкаға баҫыу* / Шундай сафҡа баҫып үткәрелгән хәрбиҙәр, пионерҙар, уҡыусылар йыйылышы. *Лагерь линейкаһы. Тантаналы линейка. Линейка үткәреү*

**ЛИ́НЗА** [*рус.* 〈 *нем.*] *и.* Оптик ҡоралдарҙа яҡтылыҡтың йүнәлешен үҙгәрткән ике сферик йөҙлө есем. *Ике яғы ҡабарынҡы линза. Ике яғы уйынҡы линза. Микроскоп линзаһы. Фотоаппарат линзаһы.*

**ЛИ́НИЯ** [*рус.* 〈 *нем.*] *и.* **1.** *ҡар.* **һыҙыҡ**[1] 1, 2. *Горизонталь линия. Горизонт линияһы. Демаркация линияһы. Экватор линияһы.*

**2.** Ниндәйҙер ике пунктты тоташтыра торған поезд, һыу һ. б. юлы. *Тимер юл линияһы. Троллейбус линияһы. Трамвай линияһы.* / Телеграф һәм телефон бәйләнеше өсөн булған сым, кабель

һ. б. ҡоролмалар системаһы. *Телефон линияһы.* / Электр тогы бирә һәм бүлә торған сым, кабель һ. б. ҡоролмалар системаһы. *Электр линияһы.*

**3.** *күсм. ҡар.* **йүнәлеш** 3.

◆ **Линия хеҙмәте** *тар.* сик буйындағы хеҙмәт. *Ук-һаҙағы, аты-туны менән ул яҡтың [Кәһте ягынының] ир-егеттәре лә империя сиктәрен һаҡлау өсөн линия хеҙмәтендә йөрөргә мәжбүр булған.* «Совет Башҡортостаны», 1966, 13 март.

**ЛИНКО́Р** [*рус.*] *и.* Ҙур операциялар башҡарыу өсөн тәғәйенләнгән эре хәрби карап (20 быуаттың беренсе яртыһында).

**ЛИНО́ЛЕУМ** [*рус.* ‹ *лат.*] Иҙәнгә түшәр өсөн эшләнгән бер йәки күп ҡатлы полимер материал. *Линолеум түшәү.* ■ *Карикатураларҙы .. Әхмәт Сәйетов иҙәнгә йәйелә торған линолеумдан эшләй торғайны.* С. Агиш.

**ЛИНОТИ́П** [*рус.* ‹ *лат.*] *и.* Наборҙы юлы-юлы менән ҡойоп йыя торған типография машинаһы.

**ЛИНОТИПСЫ** *и.* Линотип менән хәреф йыйған эшсе. *Линотипсы булып эшләү.*

**ЛИ́РА**[1] [*рус.* ‹ *гр.*] *и.* **1.** Боронғо гректарҙа сиртеп уйнай торған ҡыллы музыка ҡоралы.

**2.** Украин, белорус йырсыларының һыҙып уйнала торған үҙенсәлекле ҡыллы музыка ҡоралы.

**ЛИРА**[2] [*рус.* ‹ *ит.*] *и.* Италия менән Төркиәләге аҡса берәмеге.

**ЛИРИ́ЗМ** [*рус.* ‹ *ит.*] *и.* **1.** Сәнғәт әҫәренең хис-тойғо менән һуғарылышы, поэтик тулҡынланыш, ихласлыҡ. *Һуңғы осорҙа лиризмдың көсәйеүе хаҡ булһа ла, сюжетлы шиғыр һәм поэмаларҙың мөмкинлектәре тулыһынса файҙаланып бөтөлгән тип әйтеп булмай.* К. Әхмәтйәнов.

**2.** Лирик күтәренкелек, кәйеф. ■ *Дуҫлыҡ һәм туғанлыҡ идеяһы, патриотик пафос һәм шағирҙың көслө лиризмы йырҙы тормош поэзияһы итеп күтәрә.* Ә. Харисов.

**ЛИ́РИК** [*рус.*] *и.* Ижадына лиризм хас булған шағир.

**ЛИРИ́К** *с.* **1.** Лирикаға (1 мәғ.) мөнәсәбәтле. *Мәлих Харис нескә, тәрән тойғоло, бик үҙенсәлекле, талантлы лирик шағир ине.* Н. Нәжми.

**2.** Шиғри тойғо, нескә хис менән һуғарылған. *Лирик көй. Лирик шиғыр.*

**3.** *муз.* Йомшаҡ яңғырашлы, яғымлы. *Лирик сопрано. Лирик тенор.*

◆ **Лирик герой** авторҙың уй-тойғоһон йөкмәгән әҙәби образ. **Лирик монолог** әҫәрҙә авторҙың йәки әҙәби шәхестең үҙ уй-тойғоһон сағылдырған өлөшө. *«Декабрь йыры» жанры ягынан лирик поэма. Ул баштан-аяҡ лирик монологҡа ҡоролған.* Ғ. Хөсәйенов. **Лирик сигенеү** 1) авторҙың әҫәр эсенә ҡыҫтырып киткән лирик һүҙе; 2) *күсм. мыҫҡ.* Һөйләгән хәбәрҙән берәй тойғо тәьҫирендә ситкә тайпылыш.

**ЛИ́РИКА** [*рус.* ‹ *гр.*] *и.* **1.** Художестволы әҙәбиәттең ысынбарлыҡты авторҙың эске тәрән кисереше, уй-тойғоһо аша сағылдырған бер төрө. *Ысын лирика шағир кисерештәре аркыры тормош айышын, заман талаптарын асып бирә.* Ә. Хәкимов. / Яҙыусының үҙ әҫәрендә сағылдырылған тойғоһо. *Лирика бөтә жанрҙарға ла .. үтеп инә, уға йән һәм йәм бирә.* Ғ. Хөсәйенов.

**2.** Ошо төргә ингән әҫәрҙәр. *Тыуған ил — Ғ. Сәләм лирикаһында төп тема.*

**ЛИРИКЛЫҠ** *и.* Лиризм менән һуғарылған, эскерһеҙ, саф тойғо сағылышы. *Минең уйымса, ҡарашымса, лириклыҡ ул иң тәүҙә нескә күңеллелек.* Н. Нәжми.

**ЛИРО-ЭПИК** *с.* Лирика һәм эпос элементтарын үҙ эсенә алған (әҙәби әҫәргә ҡарата). *Лиро--эпик һәм эпик поэмала конфликт конкрет ерлеккә һәм ваҡиғаға ҡорола.* Р. Бикбаев.

**ЛИСАН** [*ғәр.*] *и. иҫк. кит.* Тел. *Гүзәл белһәң дә һин рус лисанын, эреләнеү өсөн белмә уны!* М. Ғафури. *Етенсеһе Кинйәбулат, янына булмай юлап: сикәһе тар, асыуы ҙур, тора лисаны тулап.* «Башҡорт шәжәрәләре», 1960.

◆ **Лисане хәл** 1) үҙенән-үҙе аңлашылып торған нәмә. *Халыҡ теләгенең лисане хәле матбуғаттыр.* М. Ғафури; 2) баҫма орган.

**ЛИСТ** [*рус.*] *и.* Нимәнелер раҫлаған йәки ниҙелер эшләргә күрһәтмә биргән документ. / Ниндәйҙер мәғлүмәт тултырыр өсөн тәғәйенләнгән һораулы ҡағыҙ. *Һораулыҡ лисы.* **Обходной лист** эштән киткәндә йәки башҡа сәбәп менән оҙаҡ эштә булмағанда бурысы барын-юғын раҫлап, ойошманың бүлектәрендә ҡул ҡуйҙырыр өсөн бирелгән ҡағыҙ.

**ЛИСТО́ВКА** [*рус.*] *и.* Көн үҙәгендә торған политик мәсьәләгә ҡарата йәки нимә тураһында лыр белдереү маҡсатында сығарылып, халыҡҡа таратылған ҡағыҙ. *Агитацион листовка. Листовка таратыу.* ■ *[Салих — Ғүмәргә:] Һин уның [ҡарсыҡтың] артынан шул уҡ игландар өҫтөнә үҙеңдең листовкаларыңды йәбештер ҙә йөрө.* С. Агиш.

**ЛИСТО́К** [*рус.*]: **боевой листок** ашығыс рәүештә сығарылған бәләкәй генә стена газетаһы. *Боевой листок сығарыу.*

**ЛИТВА** *и.* Литва республикаһының төп халҡын тәшкил иткән милләт һәм шул милләттең бер кешеһе.

**ЛИТВАСА** *р.* **1.** Литва телендә. *Литваса һөйләшеү.*

**2.** Литвалар кеүек. *Литваса бейеү. Литваса кейенеү.*

**ЛИТЕ́ЙЩИК** [*рус.*] *и. ҡар.* **ҡойоусы.** *Белорет металлургия заводы литейщиғы.*

**ЛИ́ТЕР** [*рус.* литера ‹ *лат.*] *и.* **1.** *иҫк.* Хәреф.

**2.** *типогр.* Кире яғы менән хәреф йәки башҡа тамға төшөрөлгән дүрткел металл (һирәкләп ағас йәки пластмасса) киҫәге.

**ЛИ́ТИЙ** [*рус.* ‹ *гр.*] *и.* Химик элемент, көмөш һымаҡ аҡ еңел йомшаҡ, һелтеле металл (тәбиғәттә саф көйө осрамай].

**ЛИТО́ГРАФ** [*рус.*] *и.* Литография эше буйынса белгес.

**ЛИТОГРА́ФИЯ** [*рус.* ‹ *гр.*] *и.* **1.** Ташҡа һүрәт төшөрөү эше һәм шул һүрәтте ҡағыҙға баҫыу ысулы. *Литография цехы.* **Литография ташы** 1) литографияла хәреф ҡалыбы хеҙмәтен үтәгән эзбизташ төрө; 2) һүрәт төшөрөлгән баҫма ҡалып.

**2.** Шул ысул менән баҫып алынған һүрәт. *Художестволы литография.*

**3.** Ташҡа баҫыу менән шөғөлләнгән предприятие йәки цех.

**ЛИТОСФЕ́РА** [*рус.* ‹ *гр.*] *и. геол.* Ер шарының өҫкө ҡатламы; ер ҡыртышы.

**ЛИТР** [*рус.* ⟨ *фр.*] *и.* **1.** Мең кубик сантиметрға тигеҙ булған шыйыҡлыҡ үлсәү берәмеге. *Ун литр һөт.* ■ *Бишенсе тәүлеккә сыҡҡас, аҙыҡ-түлек бөттө, бер анкерҙа ни бары өс литрҙай ғына һыу ҡалды.* Й. Мостафин.

**2.** *һөйл.* Шул күләмдәге шыйыҡлыҡ һыйған һауыт.

**ЛИТРА́Ж** [*рус.* ⟨ *фр.*] *и.* Һауыттың литр иҫәбе менән күрһәтелгән күләме; һыйыш. *Мискәнең литражы.*

**ЛИТРАЖЛЫ** *с.* Күпмелер литр күләмендәге шыйыҡлыҡ һыйышлы. *Бәләкәй литражлы автомобиль. Бәләкәй литражлы бак.*

**ЛИТРЛАП** *р.* **1.** Литр-литр итеп бүлеп. *Литрлап ҡойоу. Литрлап үлсәү. Литрлап һатыу.*

**2.** Күпмелер литр самаһы. *Мискәгә 200 литрлап һыу һыя.*

**ЛИТРЛЫ** *с.* Билдәле литр шыйыҡлыҡ һыйышлы. *Литрлы банка. Ярты литрлы шешә.* ■ *Ул [балыҡсы] рюкзагынан бер литрлы термос килтереп сығарҙы.* Ф. Иҫәнғолов.

**ЛИТРЛЫҠ** *и. һөйл.* Үлсәү итеп ҡулланылған бер литр һыйҙырышлы һауыт. *Литрлыҡты алып, һөткә сыҡтым.*

**ЛИФ** [*рус.* ⟨ *гол.*] *и.* Ҡатын-ҡыҙ күлдәгенең түште һәм арҡаны ҡаплап торған билдән юғарғы өлөшө.

**ЛИФТ** [*рус.* ⟨ *ингл.*] *и.* Ҡатлы йорттарҙа, шахтала үрле-түбәнле йөрөй торған күтәргес машина. *Лифт менән менеү.* ■ *Улар Шәрифкә таныш коридор буйлап барып, лифт менән төштөләр һәм кәмәгә ултырып базаға килделәр.* Ф. Лоҡманов.

**ЛИФТЁР** [*рус.* ⟨ *ингл.*] *и.* Лифт йөрөтөүсе хеҙмәткәр. // *Лифтёр ҡатын.* ■ *Килеүселәр һаман туҡтаманы. Дворниктың сығыуы булды, лифтёр килеп инде.* К. Мәргән.

**ЛИ́ФЧИК** [*рус.*] *и.* **1.** Ҡатын-ҡыҙҙың түште ҡаплап һәм күтәртеп торған эске кейеме; бюстгальтер. *Беренсе номерлы лифчик. Лифчик кейеү.*

**2.** *ҡар.* **күкрәксә** 2.

**ЛИ́ХТЕР** [*рус.* ⟨ *гол.*] *и. диңг.* Йөк тейәгес машинаһы булған баржа тибындағы карап йәки порт эсендә урындан урынға йөк ташый торған карап. *Йыҙғанан йөк тейәгән лихтерҙар үтә.*

**ЛИЦЕВО́Й** [*рус.*]: **лицевой счет** *фин.* билдәле бер кеше йәки ойошма исеменә асылған счет. *Лицевой счет асыу. Лицевой счетҡа һалыу.*

**ЛИЦЕ́Й** [*рус.* ⟨ *гр.*] *и. тар.* **1.** Революцияға тиклемге Россияла ир балалар өсөн тәғәйенләнгән привилегиялы урта йәки юғары уҡыу йорто.

**2.** Францияла һәм ҡайһы бер башҡа илдәрҙә урта уҡыу йорто.

**ЛИЦЕ́НЗИЯ** [*рус.* ⟨ *лат.*] *и. махс.* **1.** Дәүләт органдары тарафынан ил сиге аша тауар үткәреүгә бирелгән рөхсәт һәм шул хоҡуҡты раҫлаған документ.

**2.** Ниндәйҙер льгота буйынса йәки буш файҙаланыуға хоҡуҡ биргән рөхсәт ҡағыҙы. *Мышыларҙы атыу ныҡ сикләнгән. Уларға һунар махсус лицензия буйынса ғына рөхсәт ителә.* «Совет Башҡортостаны», 1980, 14 сентябрь.

**3.** Уйлап табылған нәмәне файҙаланырға йәки нимәнелер эшләп сығарырға хоҡуҡ биргән рөхсәт ҡағыҙы. *Совет ғалимдары, инженерҙары һәм техниктары уйлап тапҡан яңылыҡтарға лицензияларҙы донъяның 17 иле һатып алды.* «Совет Башҡортостаны», 1968, 9 февраль.

**ЛИ́ЧНЫЙ** [*рус.*]: **личный состав** *шул уҡ* **шәхси состав** (*ҡар.* **состав** 3). *Дивизияның личный составы.*

**ЛИША́ЙНИК** [*рус.*] *и.* Таш өҫтөндә, ағас ҡайырында, ер өҫтөндә үҫә торған, бер организмды тәшкил иткән бәшмәк менән ылымыҡтан ғибәрәт түбән төҙөлөшлө үҫемлек.

**ЛО́БЗИК** [*рус.* ⟨ *нем.*] *и.* Ағасты семәрләп бысыу өсөн тәғәйенләнгән ҡорал һәм шул ҡоралдың тар бысҡыһы. *Лобзик бысҡыһы. Лобзик менән семәрләү.*

**ЛОБОГРЕ́ЙКА** [*рус.*] *и.* Урылған игенде ҡул менән алып ташлап барырлыҡ итеп эшләнгән иң ябай урғыс машина; урғыс. *Лобогрейканың артында ултырған Зөлкәрнәй оҙон ҡамыллы, туҡ башаҡлы бойҙайҙы көсәнеп тарта-тарта манма һыуға төштө.* Ғ. Дәүләтшин.

**ЛОҒАРИ́ФМ** [*рус.* ⟨ *гр.*] *и. мат.* Билдәле бер һан сыҡһын өсөн нигеҙ һанды нисә тапҡыр ҡабатларға кәрәклеген билдәләгән дәрәжә күрһәткестәре. *Логарифмдар таблицаһы.*

♦ **Логарифм линейкаһы** төрлө ябай иҫәптәрҙе башҡарыу өсөн ҡулланылған ҡорал; иҫәп линейкаһы.

**ЛОГАРИФМЛАУ** *к. мат.* Бирелгән һандың логарифмын табыу.

**ЛО́ГИК** [*рус.*] *и.* Логика буйынса белгес.

**ЛОГИ́К** *с.* **1.** Логикаға мөнәсәбәтле, логикаға бәйле. *Логик закондар. Логик категориялар.*

**2.** Логика закондарына ярашлы, логика закондарына нигеҙле. *Логик эҙмә-эҙлелек.* ■ *Тыуған тел дәрестәре .. уҡыусының логик фекерләү һәләтлеген үҫтерергә тейеш.* Ж. Кейекбаев. / Логика закондары ярҙамында табылған, сығарылған, билдәле булған. *Логик ҡапма-ҡаршылыҡ. Логик иҫбатлау. Логик һығымта.*

**3.** Нәмәнең эске тәбиғәтенән сыҡҡан. *X класта Б. Бикбай ижадын өйрәнгәндә уның әҫәрҙәрен билдәле бер системала, хронологик тәртиптә һәм башҡа әҫәрҙәре менән эске логик бәйләнештә өйрәнеү кәрәк.* М. Ғималова.

♦ **Логик баҫым** һөйләмдәге төп мәғәнәне биргән һүҙгә айырым төшкән баҫым. *Башҡорт телендә логик баҫым ғәҙәттә һөйләмдең хәбәре алдындағы һүҙгә төшә.* Ә. Харисов.

**ЛО́ГИКА** [*рус.* ⟨ *гр.*] *и.* **1.** Фекер итеү закондары һәм формалары тураһындағы фән. *Диалектик логика. Формаль логика.*

**2.** Бәйләнешле фекер йөрөшө. *Аныҡ логика.* / Фекер дөрөҫлөгө, төплөлөгө. *Кире ҡаҡмаҫлыҡ логика. Логикаға ҡаршы. Логикаға һыймау.*

**3.** Эске законлыҡ. *Ваҡиғалар логикаһы.* ■ *Образлылыҡтың үҙ логикаһы бар, тормош логикаһы менән ул тура килеп бөтмәҫкә лә мөмкин.* К. Әхмәтйәнов.

**ЛОГОПЕ́Д** [*рус.*] *и.* Логопедия буйынса белгес. *Совет врачтары һәм логопедтары теле тотлоҡҡан балаларҙы дауалау буйынса комплекслы методтар уйлап тапты.* «Совет Башҡортостаны», 1965, 3 сентябрь.

**ЛОГОПЕДИК** *с.* Логопедияға мөнәсәбәтле. *Логопедик бүлек.*

**ЛОГОПЕ́ДИЯ** [*рус.* 〈 *гр.*] *и.* Педагогика фәненең телдәге етешһеҙлектәрҙе (тотлоғоу, һаҡаулыҡ һ. б.) һәм уларҙы дауалау ысулдарын өйрәнгән тармағы. *Логопедия бүлеге.* ■ *Логопедияны айырым балаға ҡарата ҡулланырға мөмкин булһа ла, тотош класс өсөн ярамай.* М. Тажи.

**ЛО́ЖА** [1] [*рус.* 〈 *фр.*] *и.* Театр залында стена буйлатып эшләнгән бер нисә кешелек айырым урын. *Йыр башланы ҡатын.. Ҡапыл бөтә зал тына. Бына партер һәм ложалар, галерка тына.* Ғ. Әмири.

**ЛОЖА** [2] [*рус.*] *и.* Мылтыҡ, автоматтың ағас өлөшө. *Автомат ложаһы. Ложа дуңғәләге. Мылтыҡ ложаһы.*

**ЛО́ЗУНГ** [*рус.* 〈 *нем.*] *и.* **1.** Төп идеяны, бурыс йәки талапты ҡыҫҡаса белдергән өндәмә. *Лозунг биреү. Лозунг ташлау.* ■ *Ҡалала .. эшселәрҙең бер нисә сығышы була. Был сығыштарҙа большевиктарҙың лозунгылары ифрат күп урын ала.* З. Шәрҡи. / Ҡыҫҡаса бирелгән төп идея, принцип.

**2.** Шул өндәмә яҙылған плакат. *Лозунг элеү.* ■ *Тимер Шәрәфтең оҫта ҡулы менән яҙылған, инде буяуҙары уңып бөтөп барған лозунгылар-ға оҙаҡ ҡарап торҙо.* Б. Бикбай.

**ЛОКАЛЛӘШЕҮ** *ҡ.* Билдәле урын менән сикләнеп, ары таралмау. *Локалләшкән үҫемлек.*

**ЛОКАЛЛӘШТЕРЕҮ** *ҡ.* Билдәле урын менән сикләп, таралырға бирмәү. *Эпидемияны локалләштереү. Янғынды локалләштереү.*

**ЛОКАЛЬ** [*рус.* локальный 〈 *лат.*] *с.* Билдәле бер урынға, билдәле сиккә бәйле; урындағы. *Локаль һуғыш.*

**ЛОКА́ТОР** [*рус.* 〈 *лат.*] *и.* Есемдең урынын унан сағылған тауыш йәки радио һәм электромагнит тулҡындары ярҙамында билдәләй торған ҡоролма.

**ЛОКА́УТ** [*рус.* 〈 *ингл.*] *и.* Буржуазияның күпләп эштән ҡыуыу йәки предприятиены ябыу юлы менән эшселәргә ҡаршы үткәргән көрәшенең бер формаһы. *Локаут иғлан итеү.* ■ *Эшселәрҙең берҙәм көрәше забостовкаға ҡаршы иғлан ителгән локаутты юҡҡа сығарҙы.* «Совет Башҡортостаны», 1965, 27 апрель.

**ЛОКОМОБИ́ЛЬ** [*рус.* 〈 *фр.*] *и.* Ҡаҙаны, пар машинаһы һәм төрлө ярҙамсы ҡоролмалары булған бер урынға нығытылған йәки күсмә пар установкаһы.

**ЛОКОМОТИ́В** [*рус.* 〈 *фр.*] *и.* Тимер юлда рельс буйлап вагон һөйрәп йөрөй торған машина (паровоз, тепловоз, электровоз). *Локомотив бригадаһы. Локомотив депоһы.*

**ЛОҠМА** [*ғәр.*] *с.* Бер ҡабым, бер йотом, бер бөртөк, бер тамсы (бәләкәй генә мәғәнәһендә). *Сеү, балам, сеү!.. Нишләйем һуң, мин дә ас, һин дә ас. Һис табыр хәл юҡ, йәнем, инде һиңә бер лоҡма аш.* Т. Йәнәби. *Янһары тамағына ашар ине, лоҡма ҡабым аҙығы юҡ* (Әкиәттән).

**ЛОҠОМ** *и. диал. ҡар.* **бауырһаҡ** [1].

**ЛОҠОТ** *и. диал. ҡар.* **ноҡот** [2].

● *Локотҡа һүҙ һөйләһәң, уның киреһен көйләр.* Әйтем.

**ЛОМ** [1] [*рус.*] *и.* Ҡаты нәмәне ватыу, аҡтарыу өсөн ҡулланылған осло башлы ауыр тимер таяҡ. *Әле беҙҙең эш эшме ни ул! Көрәк менән ер ҡаҙабыҙ, лом, кирка менән таш аҡтарабыҙ.* Ғ. Әхмәтшин. *Ҡайынйылға буйы әй ҡая таш, ватып та булмай лом менән* (Халыҡ йырынан).

**ЛОМ** [2] [*рус.*] *и. ҡар.* **металлолом.** *Машинаһы һуң ниндәй! Йәшәрен йәшәгән, эшләрен эшләгән, күптән инде ломға тапшырылырға тейеш.* Д. Исламов.

**ЛОМБА́РД** [*рус.*] *и.* **1.** Күсмә милекте һалған өсөн ваҡытлыса аҡса биреп торған кредит ойошмаһы. *Нәмәне ломбардҡа һалыу.*

**2.** Революцияға тиклемге Россияла төрлө төр милекте һалған өсөн аҡса биреп торған, шулай уҡ хужанан һаҡларға аҡса алып һәм уларға тейешле процентын түләп торған кредит ойошмаһы.

**ЛОМОВО́Й** [*рус.*]: **ломовой извозчик** *иҫк.* 1) ялланып ат менән йөк ташыусы. *Ҡала ҡыҙы [Нина] станцияға йөк ташыған ломовой извозчиктарҙың көр аттарын белә ине.* Б. Бикбай; 2) ялланып йөк ташый торған атлы арба. *Ломовой извозчикта йөк ташыу.*

**ЛОРД** [*рус.* 〈 *ингл.*] *и.* Англиялағы юғары ҡатлам дворяндарының нәҫелдән нәҫелгә күсә торған титулы һәм шул титулдағы кеше. **Лордтар палатаһы** Англия парламентының юғарғы палатаһы.

**ЛОСЬО́Н** [*рус.* 〈 *фр.*] *и.* Биткә, ҡулға һөртә торған еҫле һыу.

**ЛОТ** [*рус.* 〈 *гол.*] *и.* Карап өҫтөнән тороп диңгеҙ тәрәнлеген үлсәй торған навигация приборы. *Ҡул лоты. Механик лот. Лот ташлау.*

**ЛОТО́** [*рус.* 〈 *фр.*] *и.* Сатрашлы ҡатырғалағы һандарҙың йәки һүрәттәрҙең иғлан ителгән берен ҡаплап барып, кемдең алда бөтөүенә ҡарап еңеүҙе билдәләгән отош уйыны. .. *Сәй янында унар тиндән генә лото уйнаныҡлар.* А. Таһиров.

**ЛОТО́К** [*рус.*] *и.* **1.** Йөрөтөп һатыу өсөн йәтешләнгән тирәсле таҡта йәки кәштәле бәләкәй арба. *Лоток менән һатыуға сығыу. Лотокта булка йөрөтөп һатыу.*

**2.** Урамда сауҙа итер өсөн эшләнгән һатыу урыны.

**ЛОТОРЕЯ** [*рус.* лотерея 〈 *фр.*] *и.* **1.** Билет буйынса үткәрелгән аҡсалы-әйберле отош уйыны. *Лоторея билеты. Аҡса-әйбер лотореяһы. Китап лотореяһы.*

**2.** *һөйл.* Шул отошто алырға хоҡуҡ биргән билет. *Лотореяға отоу. Лоторея алыу.*

**ЛО́ТОС** [*рус.* 〈 *гр.*] *и.* Томбойоҡтар ғаиләһенә ҡараған, эре матур сәскәле, емеше ашарға яраған көньяҡ ер-һыу үҫемлеге.

**ЛО́ЦМАН** [*рус.* 〈 *голл.*] *и.* Һыу юлдарын яҡшы белеп, хәүефле һәм ҡыйын урындарҙы үткәндә, шулай уҡ портҡа ингәндә караптарға юл күрһәтеп йөрөгән белгес. *Диңгеҙ лоцманы. Йылға лоцманы. Порт лоцманы.*

**ЛОЯЛЛЕК** *и.* **1.** Хөкүмәткә ҡарата булған тышҡы тоғролоҡ. *Лояллек белдереү.*

**2.** Кемгәләр, нимәгәләр ҡарата булған йомшаҡ мөғәмәлә. *Лояллек күрһәтеү.*

**ЛОЯЛЬ** [*рус.* лояльный 〈 *ингл.*] *с.* **1.** Хөкүмәткә ҡарата тышҡы яҡтан тоғро булған. *Лояль*

*караш.* / Шул тоғролокто белдергән. *Лояль кылык.*

**2.** Кемгәлер, нимәгәлер ҡарата йомшаҡ мөғәмәлә күрһәткән. *Лояль кеше.*

**ЛӨҒӘТ** [*гәр.*] *и. иҫк.* **1.** Һүҙ. *[Гәүһәр:] Мулла абзый, бөйөк шагир [Ғ. Тукай] «йәшәйбеҙ беҙ рус менән тел вә лөғәт алмашып», тип әйткән бит.* И. Ғиззәтуллин.

**2.** Һүҙлек. *Мин Горькийҙың «Әсә» романын ул ваҡытта әле рус телен бик яҡшы белмәгәнгә күрә, ҡайһы бер һүҙҙәрҙең мәғәнәһен лөғәттән ҡарай-ҡарай уҡый инем.* Һ. Дәүләтшина.

**3.** *диал.* Юҡ-бар һүҙ; сафсата. **Лөғәт һатыу** юҡ-бар һүҙ һөйләү.

**ЛӨҠҠӘТӘ** *и. кар.* **лөктәтә.**

**ЛӨКМӘ** *с. кар.* **локма.**

**ЛӨҠТӘТӘ** [*гәр.*] *и.* Табылдыҡ нәмә, көтмәгәндә табылған мал. *[Ғәйзулла:] Лөктәтә, лөктәтә!.. Хазина, ха-хазина таптым! Хазина!* Я. Хамматов.

**ЛӨП** *оҡш.* Ауыр ғына йомшағыраҡ нәмә ҡаты нәмәгә килеп төшкәндә сыҡҡан тауышты белдергән һүҙ. *Лөп итеү.* ■ *Ҡарт .. урынынан тороп, кемделер әрләне-әрләне лә, кире эскәмйәгә лөп итеп ултырҙы.* Һ. Дәүләтшина.

**ЛӨП-ЛӨП** *оҡш.* Ҡабат-ҡабат лөп иткән тауышты белдергән һүҙ. *Лөп-лөп итеү. Лөп-лөп килеү.*

**ЛӨПӨЛДӘТЕҮ** *к.* Лөп-лөп иттереү, лөп-лөп килтереү.

**ЛӨПӨЛДӘҮ** *к.* Лөп-лөп итеү, лөп-лөп килеү. *Йөрәк лөпөлдәй.*

**ЛӨПӨР-ЛӨПӨР** *оҡш.* Йыш-йыш бәрелгән тауышты белдергән һүҙ. *Лөпөр-лөпөр итеү. Лөпөр-лөпөр килеү.* ■ *Урам буйлап лөпөр-лөпөр кешеләр сабыша.* «Һәнәк», 1968, № 8.

**ЛӨПӨРЛӘҮ** *к.* Лөпөр-лөпөр итеү, лөпөр-лөпөр килеү. *Ат тояҡтары лөпөрләгәне ишетелә.*

**ЛӨПӨРТ** *р.* Бөтәһе бер юлы; дәррәү. *Лөпөрт ергә ятыу.*

**ЛӨПӨШ** *с.* Буйға ҡыҫҡа йыуан булған (кеше йәки башҡа нәмәгә ҡарата). *Машинамды юлдан ситкә сығарып ҡуйып, ялбыр лөпөш ҡайындың күләгәһенә ауҙым.* Н. Мусин.

**ЛӨПӘРТӘЙ** *с. диал.* Лөпөш. *Лөпәртәй кеше.*

**ЛӨР-ЛӨР** *оҡш.* Сабый бала һөйләшкән йәки шуға оҡшаш тауышты белдергән һүҙ. *Лөр-лөр итеү. Лөр-лөр килеү.* ■ *Ҡыҙ .. лөр-лөр иткән аҡ көсөгөн эйәрткән* (Әкиәттән).

**ЛӨРПӨК** *с. диал. кар.* **өрпәк.** *Лөрпөк ҡарға бата-бата Таһир олатай минең янға менде.* Й. Солтанов.

**ЛӨҺ-ЛӨҺ** *оҡш.* Бәләкәй эт өргән тауышты белдергән һүҙ. *Лөһ-лөһ өрөү.* ■ *Фермалағы Еҙтырнаҡ та абалап лөһ-лөһ өрә.* С. Кулибай.

**ЛӮЗА** [*рус.* ⟨ *пол.*] *и.* Бильярд таҡтаһының тирәсендәге шар төшһөн өсөн эшләнгән муҡсалы тишек.

**ЛУНА́ТИК** [*рус.*] *и. һөйл. кар.* **илерек.**

**ЛӮПА** [*рус.* ⟨ *фр.*] *и.* Ҙурайтып күрһәтә торған тирәсле быяла. *Лупа аша ҡарау.*

**ЛУП-ЛУП** *оҡш.* Ҡатҡыл нәмә йомшағыраҡ нәмәгә һуғылғанда, бәрелгәндә йәки ауыҙ тултырып сәйнәгәндә сыҡҡан тауышты белдергән һүҙ. *Луп-луп ашау. Луп-луп итеү. Луп-луп һуғылыу.*

**ЛУПШАЙҒЫУ** *к.* Лупышҡа әйләндереү, лупыш итеү. *Бүреген лупшайтып кейеп алған.*

**ЛУПШАЙЫУ** *к.* Лупышҡа әйләнеү, лупыш булыу. *Кейеме лупшайып тора. Лупшайып һимереп киткән.*

**ЛУПШЫҠ** *с. кар.* **лупыш.**

**ЛУПЫЛДАТЫУ** *к.* Луп-луп иттереү, луп-луп килтереү. *Туныи лупылдатып ҡаға. Лупылдатып ашау.*

**ЛУПЫЛДАУ** *к.* **1.** Луп-луп итеү, луп-луп килеү. *Лупылдап тороу. Лупылдап ашау.*

**2.** *диал. кар.* **лыпылдау** 2. *Сытыр-сатыр лупылдап сереп ята.*

**ЛУПЫШ** *с.* **1.** Йәлпәшеп, йәйелеп төшкән. *Лупыш кейем.*

**2.** *кусм.* Һимереп йыуанайыуҙан йәйелеп төшкән. *Лупыш кеше.*

**ЛУРПЫШ** *с. кар.* **лупыш.**

**ЛУРТ-ЛУРТ** *оҡш.* Ат юртҡанда сыҡҡан тауышты белдергән һүҙ. *Лурт-лурт итеү. Лурт-лурт килеү.* ■ *Ҡырандасҡа егелгән ат .. баҫыу юлынан лурт-лурт юрта.* Д. Исламов.

**ЛУРТЫЛДАТЫУ** *к. йөкм. кар.* **луртылдау.** *Луртылдатып атыр юрттыра.*

**ЛУРТЫЛДАУ** *к.* Лурт-лурт итеү, лурт-лурт килеү. *Ат луртылдап юрта.*

**ЛУШ** *и.* Ыҫыҡ булһын өсөн әүеҫлектең ел һуҡҡан яғына ҡабыҡ, тал менән һалам ҡыҫып ҡуйғаргән нәмә; сыт. *Луш ҡуйыу. Луш тотоу.*

**ЛУЩИ́ЛЬНИК** [*рус.*] *и.* Дым һаҡлау йәки ҡый үләндәрен ҡоротоу өсөн тупраҡты йомшарта торған машина; һыҙыртҡыс. *Дисҡылы лущильник. Корпуслы лущильник.*

**ЛҮПЕРТ** *р.* Мул итеп, күпертеп. *Һыйырға бесәнде лүперт һалып ашатабыҙ.*

**ЛҮРКЕЛДӘҮ** *к. диал.* Луртылдау.

**ЛҮТЕР** *и.* Аҫты һаҙ, батҡыл булғанлыҡтан һелкенеп ятҡан ер.

**ЛҮТЕР-ЛҮТЕР** *оҡш.* Һаҙмат ер һелкенгәндәге хәрәкәтте белдергән һүҙ. *Һаҙлыҡ лүтер-лүтер итеп тора.*

**ЛҮТЕРЛӘҮ** *к.* Лүтер-лүтер итеү, лүтер-лүтер килеү. *Баҫҡан һайын аяҡ аҫты лүтерләп ята.*

**ЛҮШӘ** *и.* Ағас башына ҡунған епшек ҡар. *Көслө ямғыр яуа башланы. Ул епшек ҡарға әйләнеп, әле япраҡтарын да ҡойоп бөтмәгән ағас баштарын лүшә менән ҡапланы.* И. Ғиззәтуллин.

**ЛЫБЫРЛАҠ** *с.* Ишетелер-ишетелмәҫ кенә, тоноҡ һөйләшкән. *Лыбырлаҡ кеше.*

**ЛЫБЫРЛАТЫУ** *к.* йөкм. ҡар. **лыбырлау.**

**ЛЫБЫРЛАУ** *к.* Лыбыр-лыбыр итеү, лыбыр-лыбыр килеү. *Ул арала Бәҙекәй әбей ҙә килеп етте. Ул үҙенең лыбырлауын бында ла ташламаны.* С. Агиш. *Сираевтың ҡолаҡ төбөндә юҡ-барҙы лыбырлап тороуына Бикмөхәмәтовтың ысынлап та асыуы килә башлағайны.* Н. Мусин.

**ЛЫБЫРЛАШЫУ** *к. урт. кар.* **лыбырлау.** *Улар [ҡаҙаҡтар] үҙ-ара лыбырлашып һөйләшеп тә, ирешеп тә алалар.* Һ. Дәүләтшина.

**ЛЫБЫР-ЛЫБЫР** *оҡш.* Ишетелер-ишетелмәҫ кенә, тоноҡ итеп һөйләшкән тауышты белдергән һүҙ. *Лыбыр-лыбыр итеү. Лыбыр-лыбыр килеү. Лыбыр-лыбыр һөйләшеү.*

**ЛЫҒЫР** *с.* **1.** Бытырлап, мыжғып ятҡан. // *Тәрәнерәк урында балыҡ лығыр йөрөй.* Н. Мусин.

**2.** Нимәләр күп һалынған. *Аш лығыр туҡмас булған. Ашы лығыр тоҙ.*

**ЛЫҒЫРЛАҠ** *с.* Лығыр-лығыр итеп, күп һөйләгән. *Лығырлаҡ кеше.* ■ *Ҡыш етеп, силосты малдарға ҡутарып ашата башлағас, лығырлаҡтарҙың ауыҙы тиҙ ябылды.* Ә. Гәрәев.

**ЛЫҒЫРЛАТЫУ** *к.* **1.** *йөкм. ҡар.* **лығырлау** 2.

**2.** Лығыр-лығыр иттереү, лығыр-лығыр килтереү. *Лығырлатып бутҡа бешереү.*

**ЛЫҒЫРЛАУ** *к.* **1.** Лығыр-лығыр итеү (ҡайнағанда). *Лығырлап аш ҡайнау.* / *күсм.* Күп булып ҡайнашыу; мыжғыу. *Күлдә балыҡ лығырлап йөрөй.*

**2.** *күсм.* Лығыр-лығыр һөйләү. *Трещетка уның ысын фамилияһы түгел, бер туҡтауһыҙ лығырлағаны өсөн алған ҡушаматы ине.* Х. Мохтар. / Артыҡ һөйләнеү. *[Яҡуп — Фәхригә:] Бар, бар, күҙемдән юғал, күп лығырлама.* Б. Бикбай. *Кәли күпме лығырлаһа ла, волость үҙәгенә тиклем Гәүһәр уға бер төрлө лә яуап бирмәне.* И. Ғиззәтуллин.

**ЛЫҒЫРЛАШЫУ** *к. урт. ҡар.* **лығырлау** 2.

**ЛЫҒЫР-ЛЫҒЫР** *оҡш.* **1.** Ҡуйыраҡ нәмә ҡайнағанда сыҡҡан тауышты белдергән һүҙ. *Лығыр-лығыр итеү. Лығыр-лығыр килеү. Лығыр-лығыр ҡайнау.* ■ *[Ринат — әсәһенә:] Һинең ашарға һаман да шул лығыр-лығыр бешкән аштыр инде.* М. Садыкова.

**2.** Бер яй менән өҙмәй һөйләгән тауышты белдергән һүҙ. *Лығыр-лығыр һөйләнә лә һөйләнә.*

**ЛЫҒЫРЫМ** *р. диал.* Шығырым. *Лығырым тулы кеше.*

**ЛЫЖ** *р. диал.* **1.** Манма, лыс. *Лыж һыу.*

**2.** Тотош, гел. *Лыж ком.*

**ЛЫЖБЫР**[1] *с. диал. ҡар.* **ығыш.**

**ЛЫЖБЫР**[2] *р. диал.* Манма, лыс. *Лыжбыр һыу.*

**ЛЫҠ** *р.* Бүтән бер нәмә лә өҫтәп һыйҙыра алмаҫлыҡ, сигенә тиклем; шығырым, лыҡа. *Мосафирхана ҙур-ҙур бүлмәләрҙән ғибәрәт булған бер йорт. [Уның] һәр бер бүлмәһендә лыҡ тулған мосафир.* М. Ғафури.

**ЛЫҠА**[1] *р.* **1.** Бүтән бер нәмә лә өҫтәп һыйҙыра алмаҫлыҡ; лыҡ. *Лыҡа тулыу. Лыҡа тултырыу.* ■ *[Рәхимйән:] Ҡайтышлай Мәскәүгә төшөп бер нисә мең һумлыҡ бүләк алдым. Бына, сумаҙан лыҡа тулы.* Н. Иҙелбай. *Йәйге ялға ҡайтҡан студенттар менән лыҡа тулы машина .. тау һыртына килеп сыҡты.* М. Сәғитов.

**2.** *диал.* Туп-тулы. *Борон урман араһы лыҡа мал ине.*

**3.** *диал.* Лыс. *Сәгиҙәнең өҫ-башы лыҡа һыу булды, тәне сирканып өшөй башланы.* М. Тажи.

♦ **Лыҡа төшөү** *диал.* ултыра төшөү.

**ЛЫҠА**[2]**: лыҡа ер** *диал.* түмәләс.

**ЛЫҠАМА** *р. ҡар.* **лыҡа**[1].

**ЛЫҠАШТЫРЫУ** *к.* Нығ бысратыу, ҡатырыу (кейемде); һылаштырыу (һауыт-һабаны). *Һауытты яҡшылап йыумай, лыҡаштырып бөткәндәр.*

**ЛЫҠАШЫУ** *к.* Нығ бысрау, ҡатыу (кейемгә ҡарата); һылашыу (һауыт-һабаға ҡарата). *Мөйөш стенаһы ла, умывальник үҙе лә бысраҡҡа лыҡашып, ҡарайып бөткән.* «Һәнәк», 1966, № 10.

**ЛЫҠМА** *р. диал.* Лаяҡыл. *Лыҡма иҫерек.*

**ЛЫҠЫ** *с.* **1.** Ҡыҙыҡ һөйләп, көлдөрөргә оҫта; кәмит. *Лыҡы ҡарт.*

**2.** *диал.* Ныҡыш, ныҡымыш.

**ЛЫҠЫЛДАҠ** *с.* Күп һөйләүсән. *Лыҡылдаҡ кеше.* // *Сарьян .. ҡыҙҙы тынысландырһа ла күҙе алдынан ҡыҙҙың шомло йөҙө китмәне. «Туҡта, ниҙән шикләнә ул? Әллә мине Хәсәнша лыҡылдаҡҡа тиңләйме?* Ә. Байрамов.

**ЛЫҠЫЛДАТЫУ**[1] *к.* Лыҡылдарға ирек ҡуйыу.

**ЛЫҠЫЛДАТЫУ**[2] *к.* Бик ныҡ бысратыу. *Оҙаҡ яуған ямғыр аяҡ аҫтын лыҡылдатып иҙҙе.*

**ЛЫҠЫЛДАУ**[1] *к. кәмһ.* Бик күп, артығын һөйләү. *[Аллаҡаев — Ҡәҙриәгә:] Минең ғәйепте һатып, Саптыяров тағы нимәләр лыҡылданы?* С. Кулибай. *«Ашағанһың икән, лыҡылдама. Бар, дурак!» — тине лә приказчик, үҙ эшенә кереште.* Һ. Дәүләтшина. *[Ғәйнулла:] Юҡ инде, туған, мин һәр саҡ шулай лыҡылдайым да унан ғәйепле булам. Әйҙә, һеҙ башлағыҙ.* Р. Низамов.

**ЛЫҠЫЛДАУ**[2] *к.* Бик ныҡ бысрап иҙелеү. *Аяҡ аҫты лыҡылдап ята.*

**ЛЫҠЫЛДАШЫУ** *к. урт. ҡар.* **лыҡылдау**[1].

**ЛЫҠЫУ** *к. диал.* Лыҡа тулыу.

**ЛЫП** *оҡш.* **1.** Бик үк ҡаты булмаған ауыр нәмә өҫтән төшөп бәрелгәндә сыҡҡан тауышты белдергән һүҙ. *Лып итеп килеп төшөү. Лып итеп ултырыу.* ■ *Әхмәҙулла бабай [торған еренән] лып итеп кире ултырҙы.* Ә. Вахитов. *Өмөгөлсөм .. ҡулындағы самауырын төшөрөп ебәрә яҙып, иҙәнгә лып ултыртты.* З. Биишева.

**2.** *диал. ҡар.* **шып**[2]. *Бара торғас, атым лып туҡтаны ла ҡуйҙы.* М. Тажи.

**ЛЫПАШТЫРЫУ** *к.* Һендергән кеүек түшәп һалыу, ятҡырыу; лапаштырыу. *Лыпаштырып һалыу.* ■ *Дошман Лобановка аръяғындағы батареяларынан өҙлөкһөҙ миналар, реактив снарядтар ебәреп, беҙҙекеләрҙе ергә лыпаштырҙы.* С. Әлибаев.

**ЛЫПАШЫУ** *к.* Һеңешкән кеүек түшәлеп ятыу. *Лыпашҡан күбә.* ■ *Көҙ ҙә етте .. Кушеккән япраҡтар лыпашып ергә түшәлде.* Б. Бикбай. *Фазулла пулеметын асыҡ ергә сығарып ҡуя ла .. ут яуҙыра башлай. Дошман баш ҡалҡыта алмай, ергә лыпаша.* С. Ҡудаш.

**ЛЫПҠЫТЫУ** *к.* Лып иттереп, күтәреп бәреү (көрәштә). *Көрәш барған һайын киҫкенләшә бара .. Ҡәүи йәһәт кенә Ғәлиҙе тағы күкрәгенә алды. «Һал арҡаһы менән!» «Лыпҡыт!» — тип ҡысҡырыште ҡарап тороусылар.* Ғ. Лоҡманов.

**ЛЫПТЫР** *с. диал.* Мыштыр.

**ЛЫПЫ** *с. диал.* Шамтыр.

**ЛЫПЫЛДАҠ** *с.* Иреп епшекләнеп, һәлмәкләнгән. *Лыпылдаҡ ҡар.* / Ҡары ireп, епшекләнеп ятҡан. *Лыпылдаҡ көн.*

**ЛЫП-ЛЫП** *оҡш.* Ҡабат-ҡабат лып иткән тауышты белдергән һүҙ. *Лып-лып итеү. Лып-лып тамыу. Лып-лып килеү.*

**ЛЫПЫЛДАТЫУ** *к.* Лып иттереү, лып-лып килтереү. *Лыпылдатып ергә ташлау. Лыпылдатып ултыртыу.*

**ЛЫПЫЛДАУ** *к.* **1.** Лып итеү, лып-лып килеү. *Тәхәү тоҡ кеүек лыпылдап иҙәнгә коланы.* Ф. Иҫәнғолов.

**2.** Бик ныҡ иреп епшекләнеү (ҡарға ҡарата). *Аяҡ аҫтындағы ҡар көн йылыға лыпылдап ята.*

**ЛЫПЫН** *р.* Күтәрелмәй, ҡалҡынмай, ергә һылашҡан кеүек (ултырыу, ятыу). *Табынды әйләндереп лыпын ултырған кешеләр ҡорһактары тулғанлыҡтан ҡайҡая башланы.* Ғ. Дәүләтшин. / Күтәрмәй, ҡалҡытмай, ятҡырып тиерлек (һалыу һ. б.). *Оҙон, киң һәм тәртипһеҙ урамдарҙы ике яклап түбәләре лыпын ябылған тәпәшәк өйҙәр теҙелгән.* И. Көҫәпҡол. *Тәрән уя аша ергә лыпын һалып, таштан күпер эшләргә булғандар.* Н. Мусин.

**ЛЫПЫРЛАТЫУ** *к.* Лыпыр-лыпыр иттереү, лыпыр-лыпыр килтереү. *Лыпырлатып ҡағыу.*

**ЛЫПЫРЛАУ** *к.* **1.** Лыпыр-лыпыр итеү, лыпыр-лыпыр килеү. *Шинель итәге елдә лыпырлай.*

**2.** *күсм.* Йүнле эш ҡыра алмай, бушҡа ҡыбырлау. *[Кәйүм:] Донъяла йәшәгәс, канатлы булып йәшәргә кәрәк, гөбөргәйел кеүек лыпырлап йәшәү эш түгел.* С. Агиш.

**ЛЫПЫР-ЛЫПЫР** *окш.* Ҡалын ғына яҫы нәмәне тиҙ-тиҙ хәрәкәт иттергәндә, ҡаҡҡанда сыҡҡан тауышты белдергән һүҙ. *Лыпыр-лыпыр итеү. Лыпыр-лыпыр һелкенеү. Лыпыр-лыпыр килеү.*

**ЛЫПЫП** *р.* Күп булып түшәлеп, лыпын йәйелеп. *Ялан өҫтө лыпып ятҡан eләк.* С. Кулибай.

**ЛЫРҠАЙЫУ** *к. һөйл.* Һимеҙлектән йәйелеп лапшайыу. *Лырҡайып китеү.*

**ЛЫРҠ-ЛЫРҠ** *окш.* Һыулы, һаҙмат ергә аяҡ менән баҫҡанда сыҡҡан тауышты белдергән һүҙ. *Лырҡ-лырҡ итеү. Лырҡ-лырҡ килеү. Аяҡ аҫты баҫҡан һайын лырҡ-лырҡ һелкенеп ята.*

**ЛЫРҠЫЛДАТЫУ** *к.* Лырҡ-лырҡ иттереү, лырҡ-лырҡ килтереү. *Лырҡылдата баҫыу.*

**ЛЫРҠЫЛДАУ** *к.* **1.** Лырҡ-лырҡ итеү, лырҡ-лырҡ килеү. *Аяҡ аҫты лырҡылдап ята.*

**2.** Лырҡ-лырҡ хәрәкәт итеү. *Лырҡылдап йөрөп ятам әле.*

**ЛЫРҠЫШ** *с.* Һалынып торған һимеҙ. *Айрастар менән бер тиҫтер булыуға ҡарамаҫтан, ул [Шаҡман], атаһына оҡшап, бик итләс, ҙур, лырҡыш кәүҙәле.* Ш. Насыров.

**ЛЫС** *р.* Һарҡып ағып торорлоҡ, манып алған кеүек; лысма. *Лыс май итеү. Лыс һыу булыу.* ■ *Өҫ-башы лыс һыу булған Нурғәли шәмгә ут алғас ҡына ҡайтым инде.* Ф. Иҫәнғолов.

**ЛЫСБЫҠ** *с. диал.* Бысый. *Лысбыҡ күҙ.*

**ЛЫСБЫЛДАУ** *к. диал.* Бысыйланыу. *Күҙе лысбылдап бөткән.*

**ЛЫСҠ-ЛЫСҠ** *окш.* Һыулы ҡуйы нәмәгә баҫҡылағанда сыҡҡан тауышты белдергән һүҙ. *Лысҡ-лысҡ баҫыу. Лысҡ-лысҡ итеү.*

**ЛЫСҠЫЛДАТЫУ** *к.* **1.** Лысҡ-лысҡ иттереү, лысҡ-лысҡ килтереү. *Лысҡылдатып атлау.* ■ *[Колсобай] лысҡылдата кисеп, тачкаға балсыҡ тейәне.* Я. Хамматов. *Машина яңынан бысраҡ юлға боролдо. Бысраҡ юлға боролдо. Бысраҡты лысҡылдата-лысҡылдата тәгәрмәстәр алға тәгәрәне.* Р. Солтангәрәев.

**2.** *күсм.* Нимәнелер ныҡ һөртөү йәки мансыу. *Итекте лысҡылдатып майлау.* ■ *[Хужабикә] ҡоймаҡтың күпкән береһен эҫеләй ҡауырһын менән һары майға лысҡылдата майлап, ҡунаҡтар алдына килтереп тора.* Й. Солтанов.

**ЛЫСҠЫЛДАУ** *к.* **1.** Лысҡ-лысҡ итеү, лысҡ-лысҡ килеү. *Кешеләр лысҡылдап ятҡан балсыҡты йырып, ашыҡмай ғына атлай.* Х. Ғиләжев.

**2.** *күсм.* Ныҡ һөртөлөү йәки мансылыу. *Ҡоймағы лысҡылдап торған май. Түфлиенә лысҡылдағанса ҡаҙ майы һөрткән.*

**ЛЫСМА** *р.* **1.** Һығып алмалы, манып алған кеүек; лыс. *Лысма һыу булды.* ■ *Ысыҡлы үләндә йырып, .. салбар балаҡтары лысма һыу булды.* Р. Низамов.

**2.** *диал. кар.* **шыбыр** 2. *Насрулла .. Хәбирҙе үҙенә тартты, уның лысма тир булған башынан, арҡаһынан һыйпаны.* Ә. Вахитов.

**ЛЫСТЫРЛАТЫУ** *к.* Лыстыр-лыстыр иттереү, лыстыр-лыстыр килтереү. *Фәйзулла .. шыйыҡ баткаҡты лыстырлатып, алға барыуын белде.* Ф. Иҫәнғолов.

**ЛЫСТЫРЛАУ** *к.* Лыстыр-лыстыр итеү, лыстыр-лыстыр килеү. *Кәйефте ҡырып, һаман ямғыр быҫҡаҡлай. Аяҡ аҫты лыстырлап ятҡан бысраҡ.* «Ағиҙел», 1980, № 2.

**ЛЫСТЫР-ЛЫСТЫР** *окш.* Шыйыҡ батҡаҡ йәки һай ғына һыуҙы кискәндә сыҡҡан тауышты белдергән һүҙ. *Лыстыр-лыстыр итеү.* ■ *Ат иҙелеп бөткән баткаҡты сәсрәтә-сәсрәтә лыстыр-лыстыр бара.* Ғ. Ибраһимов.

**ЛЫҪТЫР** [1] *и.* Сепрәк киҫәктәренән ялбырлатып теккән ултырғыс, һандыҡ ябыуы.

**ЛЫҪТЫР** [2] *с. диал. кар.* **алама** [1] 1. *Ул ваҡыттарҙа беҙҙең ғаилә тормошо бик ауыр, өҫ-баштарыбыҙ лыҫтыр булыуын әле лә иҫемдә һаҡлайым.* М. Ғафури.

**ЛЫҪТЫРАУ** *к. диал.* Ылбырау. *Ҡыҙҙың кейем-һалымы таушалып, лыҫтырап бөткән* (Экиэттән).

**ЛЫУ** [1] *и.* Һыу өҫтөндә йүгереп йөрөгән оҙон ботло себен. *Һыу өҫтөндә батмай йүгереп йөрөгән оҙон ботло себенде күргәнең бармы? Уны атайым лыу тип атай торғайны.* З. Биишева.

**ЛЫУ** [2]**: лыу йылы** *иҫк.* ун ике йыллыҡ мөсәлдең бишенсе йылы; аждаһа йылы.

**ЛЫШҠ-ЛЫШҠ** *окш.* **1.** Баҫылып ҡына илағанда сыҡҡан тауышты белдергән һүҙ. *Лышҡ-лышҡ илау.* ■ *Маһира менән Зөһрә беҙҙең яҡҡа инәләр ҙә лышҡ-лышҡ иларға тотоналар.* «Ағиҙел», 1980, № 6.

**2.** *диал.* Мырш-мырш. *Лышҡ-лышҡ килеү. Лышҡ-лышҡ танау тартыу.*

**ЛЫШҠЫЛДАТЫУ** *к. диал.* Мыршылдатыу. *[Мыйыҡлы кеше] танауын йыш-йыш лышҡылдатып тартырға тотонды.* С. Ҡудаш.

**ЛЫШҠЫЛДАУ** *к.* Лышҡ-лышҡ итеү, лышҡ-лышҡ килеү. *Лышҡылдап илау.*

**ЛЫШТЫҠ** *с. диал.* Мыршылдаҡ.

**ЛЫШТЫР** *с. диал. кар.* **алама** [1] 1.

**ЛЬҒОТА** [*рус.*] *и.* Закон билдәләгән дөйөм ҡағиҙәне, ниндәйҙер бурысты үтәүҙән тулы-

һынса йәки өлөшләтә азат иткән хоҡуҡ. *Льгота биреү.* ■ *Колхоз үҫмерҙәр өсөн ҡыҫҡартылған эш көнө һәм башҡа льготалар билдәләй.* «Совет Башҡортостаны», 1969, 30 ноябрь. *Йөклө ҡатындарға һәм эсәләргә түләүле отпускылар һәм башҡа льготалар бирелә.* «Башҡорт АССР-ы Конституцияһы», 1984.

**ЛЬГОТАЛЫ** *с.* Льгота рәүешендә бирелгән йәки билдәләнгән. *Льготалы путёвка. Льготалы шарт. Льготалы тариф.*

**ЛӘ** [1] *терк. ҡар.* **ла** [1].

**ЛӘ** [2] *киҫ. ҡар.* **ла** [2].

**ЛӘБ** [*фарс.*] *и. иҫк. кит.* Ирен.

**ЛӘБАҺА** *киҫ. ҡар.* **лабаһа.**

**ЛӘБИБ** [*ғәр.*] *с. иҫк. кит.* **1.** Аҡыллы, зирәк. *Ләбибтәр күплеге .. илгә ғаян саҙдыр.* Ғ. Соҡрой.

**2.** *(баш хәреф менән)* Ир-ат исеме.

**ЛӘБӘЙ** *и. диал. ҡар.* **сәүек** 1.

**ЛӘБӘЙКӘ** [*ғәр.*] *киҫ. иҫк. кит.* Була ул, ярар. *Ҡуҙғала ҡандала, ҡәүҙә табантын эҙ һала, йоҡла, тип күҙҙәргә шунда һүҙ һала. Күҙҙәрем йоҡлай китә ләбәйкә, тип.* Ш. Бабич.

**ЛӘГӘН** [*ғәр.*] *и.* Еҙ тас.

**ЛӘҒЕҮ** [*ғәр.*] *с.* Мәғәнәһеҙ, буш. *Ләғеү һүҙ.* ■ *Ләғеү һөйләр уңында һәм һулында.* М. Өмөтбаев.

**ЛӘҒИЛ** [*ғәр.*] *и. иҫк.* Ал ҡыҙыл төҫтәге аҫыл таш.

**ЛӘҒИН** [*ғәр.*] *с.* **1.** Ҡарғыш алған; ҡарғышлы. *Мәғәнәһеҙ ҙә һуң әммә был тормош ләғин.* М. Ғафури.

**2.** *күсм.* Яман, яуыз. *Яман кеше, ләғин кеше ҡулаҡ була икән ул* (Халыҡ йырынан). / Әрләгәндә әйтелә. *Бына бит, ләғин малай, һорауһыҙ-ниһеҙ килгән.* Ғ. Ибраһимов.

**ЛӘҒИР** [*фарс.*] *с.* Көс-хәлһеҙ; кәгез. *Ләғир кеше. Ләғир мал.* ■ *Үгәй инәйҙең ҡултығына, ҡуйынына ҡыҫтырған, арҡаһына аҫҡан .. нәмәләре ике-өс ләғир бейәһенә торошло ине.* Ғ. Ишбулатов.

**ЛӘҒИРЛӘНЕҮ** *к.* Ләғиргә әйләнеү, ләғир булыу.

**ЛӘҒНӘТ** [*ғәр.*] *и.* Ҡарғыш, ҡәһәр. *Ләғнәт яуҙырыу. Ләғнәт ороу.* ■ *Мулла Советтарға ләғнәт уҡый юлда аунап ятҡан ерендә.* М. Ғафури. *Ләғнәт, ләғнәт ҡурҡаҡ йәллаттәргә! Ләғнәт ҡан койоусы йыртҡыска!* Д. Юлтый. // *[Үмәр:] Ҡайтып тупһама баҫмаһын, ике донъяла изгелек күрмәһен. Ата-әсә хөрмәтен белмәгән ләғнәт балаға минән фәтихә шул.* Һ. Дәүләтшина. **Ләғнәт төшкөрө** ҡарғағанда әйтелә.

**ЛӘҒНӘТЛЕ** *с.* Ләғнәтләнгән, ҡәһәрле, ҡарғышлы. *Ләғнәтле дошман.* ■ *Абдрахмандың йыры дошмандар ҡолағына, мейеһенә .. ләғнәтле үлем хәбәре булып ярып ингәндәй булған.* Ә. Вахитов. *Дошмандар .. яҙыҡлы, ләғнәтле ҡул менән беҙ ҡоҫҡан баланы ҡоҫҡандар.* Ш. Бабич.

**ЛӘҒНӘТЛӘНЕҮ** *к. төш. ҡар.* **ләғнәтләү.** *Эй, ҡәһәрле, ләғнәтләнгән иҫке донъя!* Ғ. Әмири.

**ЛӘҒНӘТЛӘҮ** *к.* Ләғнәт уҡыу, бик ныҡ ҡарғау. *Иҫке юлды ләғнәтләп, йәһәннәмгә өрҙөләр.* Д.Юлтый.

**ЛӘҒӘЛИ** *и.* Самауыр батмусы.

**ЛӘҘҘӘТ** *и. ҡар.* **ләззәт.** *Ағзаларыма сихәт һәм ләҙҙәт бирҙең. Был ниғмәт һәм байлыҡтарға мең-мең шөкөр.* М. Өмөтбаев.

**ЛӘЖЖӘК** *и. диал.* Түмәр умарта.

**ЛӘЖӘНКӘ** [*рус.* лежанка] *и. һөйл.* **1.** Сананың ике яғына ҡуйылған ҡанат. *Нурый сана ләжәнкәһенә ултырҙы.* А. Таһиров.

**2.** Ҡанатлы сана.

**ЛӘЖӘНКӘЛЕ** *с.* Ҡанат ҡуйылған. *Бөрөнән Шишмәгә тиклем ләжәнкәле саналарға тейәлеп атта барҙыҡ.* Ғ. Әмири.

**ЛӘЗЗӘТ** [*ғәр.*] *и.* Рәхәтлек тойғоһо; кинәнес. *Ләззәт алыу.* ■ *Емеш, һыуһауҙан бигерәк самауыр сәйен һағыныуҙан, иҫ киткес ләззәт менән ике сынаяҡ сәйҙе бер тоташ һемереп тә ҡуйҙы.* З. Биишева. *Кеше илай, әгәр тормошонан шатлыҡ, ләззәт таба алмаһа.* Ғ. Хәйри.

**ЛӘЗЗӘТЛЕ** *с.* Күңелгә рәхәт, хуш. *[Ирочка эргәһендә булыу] минең өсөн тормошомда осраған иң ҡәҙерле, иң ләззәтле минуттар ине.* Д. Юлтый.

**ЛӘЗЗӘТЛЕК** *и.* Рәхәтлек тойғоһо; күңел кинәнесе. *Йәшәү ләззәтлеге. Тәбиғәт биргән ләззәтлек.* ■ *Хисмәтулла сабый сағынан уҡ бөтә күңеле һәм хисе менән тәбиғәттең ләззәтлегенә бирелгән.* Я. Хамматов.

**ЛӘЗЗӘТЛӘНДЕРЕҮ** *к.* Ләззәт биреп, рәхәтләндереү. *Баҡсаның эсе тағы ла матурыраҡ. Был матурлыҡ [кешене] ләззәтләндереп тора.* С. Агиш.

**ЛӘЗЗӘТЛӘНЕҮ** *к.* Ләззәт алып, рәхәтләнеү. *Ат үрәпсеп китте лә алып ҡасты. Тәгәрмәстәр тейгән ергә тейҙе, теймәгән урында — юҡ. Ҡолаҡтарҙа ел һыҙғырҙы. .. Кәли был күренешкә ләззәтләнеп барҙы.* И. Ғиззәтуллин. *Һәр бер коштоң бар үҙ йыры: ләззәтләнеп туя алмаҫһың, тыңлаһаң да ғүмереӊ буйы.* Н. Нәжми.

**ЛӘЗИЗ** [*ғәр.*] *с. иҫк. кит.* Татлы, тәмле; ләззәтле. *Ғәбделғәзиз барҙы онотор, юкты тентер, мәғәнә сонтор, тел ләзиз.* Ш. Бабич.

**ЛӘЙКӘТЛЕ** *с. ҡар.* **лайкатлы.**

**ЛӘЙЛӘН** [*ғәр.*] *р. иҫк.* Төнө менән, төнөн; кис менән, кискеһен.

**ЛӘЙСӘН** [*фарс.*] *и.,* **ләйсән ямғыры** Яҙын яуған тәүге йылы ямғыр; йәйсән. *Яҙҙар етһә, күкрәп ләйсән уҙа, гөлдәр үрә баҫа болоҡһоп.* К. Кинйәбулатова. *Ҡоштар килтерҙеме яҙҙы, әллә ләйсән ямғырымы?* А. Игебаев. **Ләйсән һыуы** ләйсән ямғырынан йыйылған һыу.

● *Ләйсән һыуын ете йыл һаҡлаһаң, ынйыға әйләнә.* Мәҡәл.

**ЛӘЙӘҠЫЛ** *р. ҡар.* **лаяҡыл.**

**ЛӘКИН** [*ғәр.*] *карш. терк.* **1.** Мәғәнә яғынан бер-береһенә ҡаршы ҡуйылған ике һөйләмде йәки һөйләм киҫәктәрен теркәү өсөн ҡулланыла; ә, әммә, әммә ләкин. *Сығышым көсһөҙ ине, урынлы ла түгел ине, ләкин кәрәк ине.* С. Агиш. *Ҡалалар бик күп донъяла, ләкин Мәскәү бер генә.* Р. Ниғмәти. *Ҡай береһе һорай Сәйҙелдән орден тарихын да һөйләргә.— һөйләйем,— ти,— ләкин ҡыҫҡа ғына* Ғ. Сәләм. / Бер-береһенә юҡлыҡ формаһында ҡаршы ҡуйылған тиң киҫәктәрҙе йәки һөйләмдәрҙе теркәү өсөн ҡулланыла. *Шәхми инспекторға ҡарап, күҙ ҡыҫты, ләкин инспектор уның ғәҙәттән тыш өтәләнеп тороуын бер ҙә аңламаны.* Т. Йәнәби. *Тиктомалға ҡандан дың-*

*геҙ яһап, әҙәм кәүҙәһенән тау өйөп һуғышмайбыҙ, ләкин дошман килһә, тик тормабыҙ ҡулды ҡаушырып.* Ғ. Амантай.

**2.** Бер-береһенә ҡаршы фекерҙе эсенә алған ике һөйләмде йәки тик киҫәктәрҙе бергә теркәй; әммә, шулай ҙа. *Борис Васильевич .. бәләкәйерәк, ләкин йыуан ғына бер кеше ине.* С. Агиш. *Мөжәһиткә ҡамыр баҫыуҙың тәртибен өйрәтәм, ләкин булдыра алмай бит теге.* Т. Йәнәби.

**3.** Тейешле һөҙөмтәнең киреһен белдергән һөйләмде һәм һөйләм киҫәктәрен алда бирелгән һөйләм йәки һөйләм киҫәге менән теркәү өсөн ҡулланыла; әммә, шулай ҙа, шуға ҡарамаҫтан. *[Һөнәрсе:] Өйрәнсек, һин дөрөҫ әйтәһең. Минең һиңә башҡаса ярҙам итерлек мөмкинлегем юҡ. Ләкин был эш һиңә ауыр булмаҫмы?* З. Биишева. *Төрлөһө турала төрлө фекер йөрөтәбеҙ, ләкин бер һөҙөмтәгә лә килә алмайбыҙ.* Д. Юлтый. *Хан тикшертеп, тикшертеп ҡараған, ләкин гәйепле кешене таба алмаған.* Б. Бикбай.

**4.** Тәүге һөйләмдең бер һүҙен ҡабатлап, әйтелгән фекерҙе үҫтереп йәки өҫтәп килгән икенсе һөйләмде теркәү өсөн ҡулланыла. *Яҙға табан миңә һалдатҡа ҡаралырға барырға тура килде. Ләкин мине һалдатҡа алмай ҡалдырҙылар.* Т. Йәнәби. *Һүҙ әйтмәне, күкрәгенә ҡыҫты [эсәйем], беләгемә тамды йылы йәш! Ләкин был йәш ҡайғы түгел ине.* Ғ. Сәләм.

**5.** Ҡайһы бер алмаштар, мөнәсәбәтле һүҙҙәр һ. б. менән килеп, эйәрсән һөйләмдәрҙе баш һөйләм менән теркәү өсөн ҡулланыла. *Ләкин тынғылыҡ мәңгелек булмаған кеүек, ярһыуҙың да сиге була икән шул. Әкренләп ел дауыл уҙған. Диңгеҙ тағы тынған.* З. Биишева. *Һөйләй Сәйҙел. Тәртибе юҡ ләкин һүҙенең.* Ғ. Сәләм.

**6.** Ҡайһы бер башҡа ҡаршы ҡуйыу теркәүестәре менән бергә килеп, ҡаршы ҡуйыу мәғәнәһен көсәйтә. *Ҡаршы булмаҫ инем, әммә ләкин бара алмайым.* ■ *Вә ләкин шайтан ҡорған сихыр менән ҡул икегә бүленгән уртаһынан.* Ш. Бабич.

**7.** Ваҡыт рәүеше һәм ваҡытты белдергән һүҙҙәр менән килеп, әҙмә-әҙлек тәртибендә бәйләнгән һөйләмдәрҙе һәм һөйләм киҫәктәрен бергә теркәү өсөн ҡулланыла. *Яҙ көнө мин тағы ла өйрәнгән ҡаҙаҡ араһына уҡытырға барҙым. Ләкин был юлы эш уңышһыҙ булды.* Т. Йәнәби. *Күптән белә һине, ләкин бөгөн күҙ түлтырып тағы ҡараным.* М. Хәй.

**ЛӘКӘК** *и. диал. ҡар.* **сәкән**[1] 2. *Ләкәк һуғыу.* ■ *[Ҡуҙыйкүрпәс] балаларҙың туптарын, уҡтарын, ләкәктәрен талап алып, йөҙәтә торған булған.* «Ҡуҙыйкүрпәс менән Маянһылыу».

**ЛӘКӘҪ** *с. диал. ҡар.* **бысый** 1. *Ләкәҫ күҙ.*

**ЛӘҠӘП**[1] **1.** *и.* Тағылған исем; ҡушамат. *Яубаҫар ауылында ҡушаматһыҙ кешене табыуы ҡыйын. Ҡайһы берәүҙәренә хатта икешәр-өсәр ләҡәп тағылған.* К. Мәргән. *[Бәхти:] Мин ләҡәпте, туғандар, үҙемә үсле кешеләргә таға торғайным.* С. Агиш.

**2.** Кешенең үҙенә алған икенсе исеме; псевдоним. *Әҙәби ләҡәп.* ■ *Әхмәҙиҙәрҙе бер-береһе менән бутамаҫ өсөн, йола буйынса, уларҙың һәр береһенә ләҡәп исем биргәндәр.* Ж. Кейекбаев.

**ЛӘҠӘП**[2] [*ғәр.*] *с. иҫк. һөйл.* Көлдөргөс, мәрәкә. *Ләҡәп һүҙ.*

**ЛӘЛ-ЛӘЛ** *р.* **1.** Аяҡ өҫтө, аяҡ үрә (яңы баҫа башлаған сабый балаға ҡарата). *Ләл-ләл баҫыу.*

**2.** *өнд.* Баланы аяҡ өҫтө баҫырға өндәгәндә әйтелә.

**ЛӘЛӘ** *и.* **1.** Һуғанбаштар ғаиләһенә ҡараған, төрлө-төрлө төҫтәге ҡыңғырау сәскәле, шыма ҡыяҡ япраҡлы баҡса гөлө. *Һары ләлә.* ■ *Талғын ғына тирбәләләр ҡайнар көньяҡ сәскәләре — аҡ ләләләр.* М. Кәрим. **Сыбар ләлә** *ҡар.* **һарына. Һыу ләләһе** аҡ томбойоҡ.

**2.** (*баш хәреф менән*) Ҡатын-ҡыҙ исеме.

**ЛӘМ**[1] *и.* **1.** Һыу төбөнә ултырған йомшаҡ тупраҡ һәм батҡаҡ. *Һағыҙ һымаҡ ҡуйы ләмдән аяҡтарҙы саҡ һурып алабыҙ.* Й. Солтанов. / Шифалы батҡаҡ. *Ләмгә ултырыу.* ■ *Тоҙло күлдәр Башҡортостанда аҙ, ә инде Мулдаҡ кеүек шифалы, ләмгә бай күлдәр юҡ тиһәк тә ҙур хата булмаҫ.* «Совет Башҡортостаны», 1967, 13 апрель.

**2.** *диал.* Ылымыҡ.

**ЛӘМ**[2] [*ғәр.*]: **ләм йәлид** *иҫк. кит.* тыуманы. *Мин өмөт иткән Вәлидтәр «Ям Вәлид» тән ләм йәлид.* Ш. Бабич. **Ләм йәлтәфит** *иҫк. кит.* илтифат итмәне, иҫе китмәне, иғтибар бирмәне. *Төштө ул зат ергә: ул бер ҡош икән .. Торҙолар ләм йәлтәфит шайтан иле; әммә ул зат ҡош түгел, ябраил ине.* Ш. Бабич. **Ләм йобариҡ** *иҫк. кит.* файҙа булмаҫ. *Шиғырҙы мотлаҡ тыйыу уңай булмаҫ, һәм йәнә ләһү булһа, ләм йобариҡ.* Аҡмулла.

**ЛӘМЕЛДӘҮ** *ҡ.* Бик ләззәтләнеп, тәмләп һүҙ һөйләү. *Ләмелдәп һүҙен һөйләп торор ине.*

**ЛӘМЕЛДӘШЕҮ** *ҡ. урт. ҡар.* **ләмелдәү.**

**ЛӘМКӘ** [*рус.* лямка] *и.* **1.** Артмаҡ бауы. *Үтте бурлаҡтар .. Утлы тимер булып баҫа ләмкәләр, буй-буй янған эҙҙәр ҡала елкәлә.* Х. Ғиләжев.

**2.** Мисәү. *Ҡамыт, сбруй, ләмкәләрҙе .. яңы ҡайыштан яһатып, дегетләп ҡуйған.* Ғ. Дәүләтшин.

**ЛӘМЛЕ** *с.* **1.** Ләм ҡаплаған. *Ләмле йылға төбө. Ләмле күл.*

**2.** *диал.* Ылымыҡлы.

**ЛӘМЛӘНЕҮ** *ҡ.* Ләм менән ҡапланыу. *Ярҙарының нык ашалыуы арҡаһында Димдең төбө ләмләнә.* «Совет Башҡортостаны», 1965, 25 февраль.

**ЛӘМ(МА)** [*ғәр.*] *киҫ. иҫк. кит.* Юҡлыҡты белдерә. *Алтын биреп алмайҙар ләмма рәжә.* Аҡмулла.

**ЛӘМ-МИМ** [*ғәр.*] *и.* Бер нәмә лә, бер һүҙ ҙә әйтмәгәнде белдереү өсөн ҡулланыла. *Рәшиҙә ул турала ләм-мим һүҙ әйтмәне.* М. Тажи. *М. Ғафури хаҡында ла, Ғ. Туҡай менән Бабич хаҡында ла күп яҙалар. Тик әллә нишләп Аҡмулла тураһында — ләм-мим.* Ә. Вахитов.

**ЛӘҢГЕ** *и.* Солоҡтан бал алғанда баҫып тора торған арҡыры ағас (кәкрерәк ағастың ике яҡ башына ҡайыш тағып, солоҡ ағасына ҡуша уратып бәйләп ҡуйыла).

**ЛӘҢКЕЛДӘК** *с.* **1.** Күп өрөүсән. *Ләңкелдәк эт.*

**2.** *кусм.* Күп һөйләүсән. *Ләңкелдәк ҡатын.*

**ЛӘҢКЕЛДӘТЕҮ** *ҡ. йөкм. ҡар.* **ләңкелдәү.** *Этте ләңкелдәтеү.*

**ЛӘҢКЕЛДӘҮ** *ҡ.* **1.** Ләңк-ләңк итеү, ләңк-ләңк килеү. *[Мәхмуттең эте] һыуға барған бисәләргә ҡарап, көнө буйы ләңкелдәп өрөп тик тора тор-*

*гайны.* С. Агиш. *Ауыл мөгәрәпкә төштө, эттәр генә сыкты ләңкелдәп.* Р. Ниғмәти.

**2.** *күсм.* Күп һүҙгә етеү, күп һөйләнеү. *[Шаҙра — Дамирга:] Ләңкелдәп торма инде, һуңга калабыҙ бит.* Р. Ғабдрахманов.

**ЛӘҢКЕЛДӘШЕҮ** *к. урт. йөкм. кар.* **ләңкелдәү.** *Ләңкелдәшеп ултырыу.* ■ *Сурагол урынынан кузғалып, ауылга ингәндә, Ыласын карттың бурҙайы абалап сыкты, уга кушылып, башка эттәр ҙә ләңкелдәшә башланы.* Т. Хәйбуллин.

**ЛӘҢК-ЛӘҢК** *окш.* **1.** Сәүек эт өргән тауышты белдергән һүҙ. *Ләңк-ләңк итеү. Ләңк-ләңк өрөү.*

**2.** *күсм.* Күп һүҙгә етешкәнде белдергән һүҙ. *[Ғәззә әбей менән килененең] ләңк-ләңк тауыш барҙы йорттарында иртәһен дә, йәнә кисен дә.* Т. Арслан.

**ЛӘҢ-ЛӘҢ** *окш. кар.* **ләңк-ләңк.**

**ЛӘП** *и.* Тейен һукмағы.

**ЛӘПЕЙ** *с. диал.* Ләпелдәк.

**ЛӘПЕК** *и. диал.* Койо, батҡаҡ.

**ЛӘПЕЛДӘК** *с.* Күп һөйләүсән. *Ләпелдәк бала.* ■ *Недосека был ләпелдәктең [Аграфена Ивановнаның] тагы әллә ниҙәр һөйләүенән котолоу өсөн, һүҙгә катышмай, ниңәлер моңһоу гына ултырган катынына өндәште.* Н. Мусин.

**ЛӘПЕЛДӘТЕҮ** *к. мыҫк.* Күп һөйләндереү.

**ЛӘПЕЛДӘҮ** *к. мыҫк.* Күп итеп һөйләү. *[Мотал — Гөләйшәгә:] Йыйылышта минең өҫтән тороп ярты сәгәт буйы ләпелдәүең әҙ булдымы ни?* М. Хәйҙәров.

**ЛӘПЕЛДӘШЕҮ** *к. урт. кар.* **ләпелдәү.** *[Нәсимә]: Куйсы, куй .. һеҙҙең менән ләпелдәшеп, ни һан гүмерем үтте, тиҙерәк кайта һалайым.* Һ. Дәүләтшина.— *Оҙак ләпелдәшеп ултырабыҙ икән дә баһа! Йокларга вакыт, иптәштәр!* Я. Хамматов.

**ЛӘПКЕ** *и. диал.* Биш таш (*кар.* **таш**).

**ЛӘП-ЛӘП** *окш.* **1.** Эт, бесәй, ваҡ мал бер нәмә эскәндә сыҡҡан тауышты белдергән һүҙ. *Кәзәләр һыу эскәс, яландылар ләп-ләп.* К. Кинйәбулатова.

**2.** Ваҡ-ваҡ кына итеп ялпылдаған, ялпылдата баҫҡан хәрәкәтте белдергән һүҙ. *[Зәйнәп] Шамил агайга ләп-ләп баҫып килеп етте.* К. Кинйәбулатова.

**ЛӘПРӘЙЕҮ** *к. кар.* **лапрайыу.** *Ләпрәйеп ултырган агас.*

**ЛӘПРӘЙЕШЕҮ** *к. урт. кар.* **ләпрәйеү.** *Кыҙҙырыуҙан, ысык та юклыктан ләпрәйгән агас, үләндәрҙе ямгыр йәшәртте.* А. Таһиров.

**ЛӘПҺЕҮ** *к.* Карҙы йырып, аҫка инеү (куянға, кайһы бер кошка карата). *Кош карҙы ләпһеп ята.*

**ЛӘПШӘЙЕҮ** *к. кар.* **лапшайыу.** Уның *[Мөтәйҙең] Тимергәленән ни ере артык: өҫтөндә — каткан гимнастерка, башында — ләпшәйгән кепка.* Ф. Иҫәнғолов.

**ЛӘПШӘЙЕШЕҮ** *к. урт. кар.* **ләпшәйеү.**

**ЛӘПШӘЙТЕҮ** *к.* Йәйелдереп, өҫтән йәмшәйтеү. *Ләпшәйтеп кейеү.*

**ЛӘПӘК** [1] *с.* Төп яғы киң, өҫтө ялпаҡ; тәпәш. *Ләпәк өйҙәрҙең мөрйәләре генә күренә.* З. Биишева.

◆ **Ләпәк сыҡкан** *диал.* һуҡыр сысҡан (*кар.* **сысҡан**).

**ЛӘПӘК** [2] *и. диал.* Ләпәкәй. *Күгәүен, ләпәк була башлагас та малды елләүек акланда тотабыҙ.*

**ЛӘПӘКӘЙ** *и.*, **ләпәкәй себен** Ваҡ кына себен; һуҡыр себен. *Ғәйзулла һырып алган ләпәкәйҙәрҙе сәпелдәтеп һуга-һуга, кайын башынан .. ергә һикерҙе.* Я. Хамматов.

**ЛӘПӘҪ** *с. диал.* Ялҡау, йоҡосо.

**ЛӘПӘҮ** *к.* Ус менән йомшаҡ кына итеп яратып һуҡкылау. *Мәхмут кырмыҫка иләүенә әйелде лә усы менән генә ләпәп алды.* Р. Ғабдрахманов. *Мәликә шарфымды рәтләп куйҙы ла йылы кулы менән битемдән ләпәп алды.* Ғ. Ибраһимов.

**ЛӘПӘШ** *с.* **1.** Йәйелеп, йәлпәш ятҡан; ләпәк, тәпәшәк. *Өйҙәр самандан һалынган, күбеһенсә ләпәш түбәле.* К. Мәргән.

**2.** Тәбәнәк буйлы, тәпәш (кешегә карата).

**ЛӘПӘШЕҮ** *к.* Ергә һеңешкән һымаҡ йәйенке һәм киң булыу. *Ергә ләпәшкән һалам башлы йорттар юк тиерлек хәҙер ауылда.* Ф. Иҫәнғолов.

**ЛӘПӘШКӘ** *с. диал.* Ләпәш, тәпәш.

**ЛӘПӘШТЕРЕҮ** *к.* Ергә һеңешкән һымаҡ йәйенке һәм киң итеү.

**ЛӘС** *с. диал. кар.* **бысый** 1. *Икмәк ләс булган.*

**ЛӘСКЕЛДӘҮ** *к. диал.* Бысый булыу. *Икмәге ләскелдәп тора.*

**ЛӘСТИТ** [*рус.* ля́сы] *и.* Ваҡ-төйәк һүҙ, ғәйбәт. *[Рахмай:] Китегеҙ, ләстит менән вакытты үткәрәһегеҙ. Булатты тыңлаһаң, һүҙе бынау Миәс буйындагы таш кеүек күп.* К. Кинйәбулатова. *Ниндәй хәбәр һөйләне һуң әле был Шәмсун? Кем, ниңә уйлап сыгарҙы икән ул ләститте.* Н. Мусин. **Ләстит һатыу** ваҡ-төйәк һүҙ, ғәйбәт һөйләү. *Урамдан үткән халык йырлаган тауыш ишетелде. Үҙ-ара ләстит һатып ултырган Шәһәрбаныу менән Гөлмәҙинә икеһе ике тәҙрәгә йүгерҙе.* Я. Хамматов. *Сәй менән кәнфит һурып, йәш кенә ике катын ултыра һай гөрләшеп, берләшеп, ләстит һатып.* Р. Ниғмәти.

**ЛӘҪ** *и.* **1.** Еүешлек, дым. *Ләҫ баҫыу. Йәбештергән кагыҙ ләҫ булып кубып төшә.*

**2.** *күсм.* Ҡаплап, баҫып алған төшөнкөлөк, ялҡаулыҡ. *Иптәшенең һәр һүҙе Георгий Ивановичтың йөрәгенән .. юйылмай ҙа тормош ләҫе менән дә капланмай.* Ш. Янбаев.

**ЛӘТАФӘТ** [*гәр.*] *и.* **1.** Гүзәллек, матурлыҡ, йәмлелек. *Һауанан бер ләтафәт хуш еҫ аңкып тора.* Ғ. Рафиҡи. *Ләтафәт багын ситтән күреп, гашик булып һайра.* М. Ғафури.

**2.** Яғымлылыҡ, һөйкөмлөлөк, наҙлылыҡ. *Рус теле электән үк бай ине, ләкин был телде гүзәл иткән, был телгә кеүәт һәм ләтафәт биргән Пушкин булды.* М. Өмөтбаев.

**ЛӘТСӘ** *и. диал.* Йәтсә.

**ЛӘУАЗИМ** [*гәр.*] *и. иҫк.* **1.** Кәрәкле нәмә.

**2.** Вазифа. *Ғаяз ун биш йылдан артык старшиналык ләүазимын үтәп килә.* Д. Юлтый. *[Сабир мулла:] Зыя Камалиҙың минең урынга мулла булыуына аслан ризалыгым юк. Үҙемдең ләуазимымды улым Ғәбделхайга бирергә кәрәк ине.* Б. Ишемғол.

**ЛӘҮЕШ** *с.* Йәлпәшеп, йәйелеп төшкән. *Ләүеш кәпәс.*

**ЛӘҮКЕЛДӘТЕҮ** *к. йөкм. кар.* **ләүкелдәү.** *Ләүкелдәтеп өрҙөрөү.*

**ЛӘҮКЕЛДӘҮ** *к.* Ләүк-ләүк итеү, ләүк-ләүк килеү. *Эт ләүкелдәй.* ■ *[Биксән ағайҙың] эте бушҡа ләүкелдәргә белә, бүре есен һиҙҙеме, ҡойроғон ҡыҫып, солан ягын ҡарай.* Р. Солтангәрәев.

**ЛӘҮКЕЛДӘШЕҮ** *к. урт. ҡар.* **ләүкелдәү.** *Арғы оста ла, биргеһендә лә эттәр генә үҙ-ара ләүкелдәшеп, тағы бер ҡат дәррәү өрөп алдылар ҙа тиҙҙән бөтәһе лә тынды.* Д. Исламов.

**ЛӘҮКЕТЕҮ** *к.* Бик ныҡ ялҡынландырыу. *Ләүкетеп ут яндырыу.*

**ЛӘҮКЕҮ** *к.* **1.** Бик ныҡ ялҡынланыу. *Ләүкеп яныу.* ■ *Кистән бире бер ләүкеп, бер быҫҡып янған ут та әкренләп кенә һүрелә бара.* З. Әхмәтов. *Ҡараңғы өйгә ит еҫе таралған. Усаҡта ут күңелле генә итеп ләүкей.* Ф. Иҫәнғолов. / *күсм.* Дәррәү күтәрелеү. *Граждандар һуғышы йылдарында башҡорт совет сатираһы ла ләүкеп ҡабынып, активлашып китте.* Ғ. Хөсәйенов.

**2.** *күсм.* Ҡапыл тоҡаныу, ҡабыныу (йөрәк, хискә ҡарата); дөрләү. *Гөлнисаның күңеле яҙғы сәскә һымаҡ асылып .. ләүкеп киткән керһеҙ хистәрен Мансурға бирҙе.* Ә. Хәкимов.

**ЛӘҮК-ЛӘҮК** *окш.* Бәләкәй эт өргән тауышты белдергән һүҙ. *Ләүк-ләүк итеү. Ләүк-ләүк килеү.* ■ *Соландағы ялбыр көсөк ләүк-ләүк өрә* (Әкиәттән).

**ЛӘҮКӘ** *и. ҡар.* **эләүкә.** *Ләүкәгә менеү.* ■ *Ғамилә мунсаның иҙәнен, ләүкәһен йыуғас, пыхылдап барып, тағы ла ике көйәнтә һыу килтерҙе.* Б. Бикбай. *Еңгә әйтә: — Парлы мунса ҡарт-ҡороға ожмах ул, ти. Ләүкәһендә һөйәк ирей, уның кеүек булмаҫ ул, ти.* Т. Арслан.

**ЛӘҮ-ЛӘҮ** *окш. ҡар.* **ләүк-ләүк.** *Ҡыҙ йортҡа ҡайтып ингәс, уны ҡапҡанан уҡ үҙҙәренең бер бәләкәй генә көсөктәре ҡаршы сығып ала.— Үлергә киткән апайым байып ҡайтып килә лә ләү-ләү,— тип өрә көсөк* (Әкиәттән).

**ЛӘҮХ** [*ғәр.*]: **ләүх әл-мәхфүз** *иҫк. кит.* дини хөрәфәтсә, кешенең күрәсәге яҙылған таҡта; яҙмыш таҡтаһы. *Әҙәмдең үҙәк һүҙе бары бикәр, яҙылған ләүх әл-мәхфүз үҙгәртелмәҫ.* Аҡмулла.

**ЛӘҮХӘ** [*ғәр.*] *и. иҫк. кит.* **1.** Матур итеп яҙып эленгән таҡта.

**2.** Ойошма йәки предприятиеның исеме яҙып эленгән таҡта; вывеска. *Ҡапҡа башына ләүхә ҡағылған.*

**3.** Ниндәй ҙә булһа күренеш. *Әйе, һиңә бөтә матурлыҡтың һәйкәл мөжәссәме бирелгән; тәбиғәттең матур ләүхәһенән ҡөдөси мәғәнә, рухтар өрөлгән.* Д. Юлтый. *Күрмәйем һис шатлыҡ, әйләнәмдә күңелһеҙ ләүхәләр теҙелгән.* С. Ҡудаш.

**ЛӘҮХӘЛӘНЕҮ** *к. иҫк. кит.* Кәүҙәләнеү. *Туҡайҙың: «Керләнә өҫ-өҫтөнә рух, һис хозур выждангa юҡ, ни сәбәптән был йыһанда тәнгә — мунса, йәнгә юҡ»,— тигән шиғырҙары күҙ алдында ләүхәләнә.* Д. Юлтый.

**ЛӘҮШӘ** *и. диал.* **1.** Лүшә. *Ағас башын ләүшә ҡаплаған.*

**2.** *ҡар.* **батҡаҡ** 1.

**ЛӘҮШӘЙЕҮ** *к.* Ләүешкә әйләнеү, ләүеш булыу; йәлпәшеү. *Башындағы фуражкаһы ләүшәйеп бөткән.*

**ЛӘҮӘШ** *и.* Өҫтөн асыҡ итеп, ҡамыр менән сатрашлап, емеш-еләктән бешергән йоҡа бәлеш. *Ҡаҙан тултырып ит һалынды, биш-алты йәймә һалма йәйелде, тултырма, йыуаса, ләүәш, күмәс — береһе лә ҡалмай бешерелде.* З. Биишева. **Ҡатлы ләүәш** төрлө емеш-еләктән ҡат-ҡат итеп бешергән ләүәш.

**ЛӘФЗАН** [*ғәр.*] *р. иҫк. кит.* Һүҙҙең мәғәнәһенә ҡарамай, иғтибар итмәй. **Ләфзан морад** һүҙҙең мәғәнәһен белеүҙе маҡсат итеп ҡуймай. *Мәктәптә уҡып көрьән, ләфзан морад, мәғәнәһенән бик аҙ ҡалған хәбәр алған.* С. Яҡшығолов.

**ЛӘФЗИ** [*ғәр.*] *с. иҫк. кит.* Телдән әйтелгән, һүҙгә бәйләнешле.

**ЛӘФЫЗ** [*ғәр.*] *и. иҫк. кит.* Һүҙ. **Ләф(ы)зы хаҡ** дөрөҫ, хаҡ һүҙ. *Әй мөкәтдәс ләфзы хаҡ! Буләк игә исемең ишетелгәндә күңелгә ҙур хаят.* Б. Мирзанов. **Ләфыз атыу** һөйләү. *Ирҙең хәле беленер, ләфыз атһа, кемдең хәле беленер, йәшерен ятһа?* Аҡмулла.

**ЛӘХ** [*ғәр.*]: **ләх иҫерек** бик ныҡ иҫерек; лаяҡыл иҫерек. *Ләх иҫерек ине Вафа, тешен шығырлатып төштө атынан.* Ш. Бикҡол. **Ләх булыу** бик ныҡ иҫереү; лаяҡыл булыу. *Шул көндө Миңнулла Әйүповтың, үҙ өйөнә ҡайтмайынса, ҡайҙалыр ләх булып иҫереп йөрөгәнен күргәндәр.* Ғ. Ибраһимов.

**ЛӘХЕМ** [*ғәр.*] *и. иҫк.* Ит. / Емештең йомшаҡ өлөшө, ите.

**ЛӘХЕТ** [*ғәр.*] *и.* **1.** Гүр, ҡәбер. *Ҡурҡмайым һалҡын ләхеттән, ләкин ниңә баш юғалтыу?* Д. Юлтый. *[Әсә — улына:] һау-сәләмәт йөрөп, әйләнеп ҡайт, дусар була күрмә ләхеткә.* Б. Вәлид.

**2.** Ҡәберҙең һул яҡ ҡабырғаһынан өңөп эшләнгән мәйет урыны. *Ләхет алыу.* ■ *Мин ҡулым менән тирә-яғымды һәрмәп ҡарап, кирбестән ләхет буратып ҡуйған ҡәбер соҡорона килеп дөмөккәнемде белдем.* З. Хисмәтуллин. **Ләхет таҡтаһы** мәйетте ләхеткә урынлаштырғас, тупраҡ төшмәһен тип ҡыуышлап ҡаплап ҡуя торған таҡта. *Ғәйзулла йүкә ҡабығынан ләхет таҡтаһы яһап, һай ғына ҡәбер тышынан күренеп ятҡан сабый мәйетенең өҫтөн ҡапланы ла ҡар ҡатыш ер менән баҫтырҙы.* Я. Хамматов.

● *Ҡатыны яҡшы кешегә бәхет кәрәкмәй, ҡатыны яман кешегә ләхет кәрәкмәй.* Мәҡәл.

**ЛӘХЗӘ** [*ғәр.*] *и. иҫк. кит.* **1.** Күҙ ҡарашы; ҡараш. *Балҡый ҡөдөсиәт вә серле мәғәнә һәр бер ләхзәлә.* Д. Юлтый.

**2.** Бик ҡыҫҡа ваҡыт араһы. *Алды тынлыҡ донъяны шул ләхзәлә.* Ш. Бабич. *Ләхзәһенә донъя хаҡ бирмәгән, ҡайҙа ҡалды кисе, көндөҙө.* Ғ. Иҫәнбирҙин.

**ЛӘХӘҮЛӘ** [*ғәр.*] *и. дини* Ошо һүҙ менән башланған доға исеме. *Ләхәүләне уҡыу.* ■ *Ҡалала паника үҫкәндән-үҫә. Һәр мылтыҡ тауышынан сәждәгә йығылып, ләхәүләһен уҡырға тотонған мещан халҡы уны юрамал күтәрә.* И. Насыри. / Шул доға урынына әйтелә торған һүҙ. *[Староста:] Ләхәүлә, тфү, тфү, был шайтан эше икән, шайтан эше икән.* Һ. Дәүләтшина. *Һәр кеше аҡтыҡ сәғәт ләхәүлә, ти, ярлыҡа, я алла, тәүбә, тәүбә, ти.* Ш. Бабич.

♦ **Ләхәүләһен уҡытыу** ҡурҡытыу, кәрәген биреү.

**ЛӘҺҮ** [*ғәр.*] *и. иҫк. кит.* Уйын-көлкө. *Теш кыҫып торһон эле барлыҡ уйын-көлкө, ләһү.* Ш. Бабич.

**ЛӘШКӘР** [*фарс.*] *и. иҫк. кит.* Ғәскәр, армия. *Барса шайтан тупланып, мәхшәр ҡубып, килделәр диңгеҙ кеүек ләшкәр булып.* Ш. Бабич.

**ЛӘШПЕРЛӘҮ** *к.* Килешһеҙ булып, һалынып төшөү. *Ғәҙәттән тыш ябыҡ булыуы сәбәпле, [офицерҙың] — кейгән кейеме, тағы бер кеше һыйырлыҡ булып, ләшперләп тора.* И. Насыри.

**ЛӘШӘ** *и. ҡар.* **лүшә.** *Ағас башын ләшә ҡаплаған.*

**ЛӘШӘЙ** *шул уҡ* **шәй түгел** (*ҡар.* **шәй**).

**ЛЮК** [*рус* 〈 *гол.*] *и.* Берәй нәмәнең эсенә инеү өсөн хеҙмәт иткән ҡапҡас менән ябылмалы тишек. *Люкты асыу. Люктан сығыу. Люкты ябыу.* ■ *Сабельник Мотаһар Галин атта елдереп килеп, танкы өҫтөнә менеп китте һәм люгын асып, автомат төйҙәһе менән водителдең башына ҡундырҙы.* Ә. Ихсан.

**ЛЮКС** [1] [*рус.* 〈 *лат.*] *и. физ.* Яҡтыртыу күләмен үлсәү берәмеге.

**ЛЮКС** [2] [*рус.* 〈 *фр.*] *и.* Юғары категориялы гостиница номеры, каюта йәки башҡа нәмә. *Люксҡа урынлашыу.*

**ЛЮЛЬКА** [*рус.*] *и.* Мотоцикл ҡабырғаһына беркетелә торған арба. *Люлькалы мотоцикл.*

**ЛЮМЕН** [*рус.* 〈 *лат.*] *и. физ.* Яҡтылыҡ ағымын үлсәү берәмеге.

**ЛЮМИНА́Л** [*рус.* 〈 *лат.*] *и. фарм.* Йоҡлата һәм тынысландыра торған аҡ кристаллик матдә.

**ЛЮМИНЕСЦЕ́НЦИЯ** [*рус.* 〈 *лат.*] *и. физ.* Газдың, шыйыҡлыҡтың һәм ҡаты есемдең, атомдарын, молекулаларын йылылыҡтан башҡа ҡуҙғытыу һөҙөмтәһендә нурланышы.

**ЛЮМПЕН-ПРОЛЕТАРИА́Т** [*рус.* 〈 *нем.*] *и.* Капиталистик йәмғиәттә: бер синыфҡа ла ҡарамаған кешеләр ҡатламы; этрәгәләмдәр.

**ЛЮПИ́Н** [*рус.* 〈 *лат.*] *и.* Ҡуҙаҡлылар ғаиләһенә ҡараған йәшел ашлама йәки гөл итеп үҫтерелгән үлән (мал аҙығы итеп ҡулланыла). *Люпин орлоғо. Люпин оно. Люпин сәсеүлеге.*

**ЛЮСТРА** [*рус.* 〈 *фр.*] *и.* Бер нисә шәмдән йәки май шәмдән торған аҫылмалы яҡтыртҡыс; кәндил. *Хрусталь люстра.* ■ *Залдың бөтә түбәһен йөҙәрләгән ваҡ кына электр лампалары менән биҙәлгән эре-эре суҡлы люстралар ҡаплаған.* Һ. Дәүләтшина.

**ЛЮТЕРАН** [*рус.* лютеранин] *и.* Лютеранлыҡ диненен тотҡан кеше. *Лютерандар дине. Лютерандар сиркәүе.*

**ЛЮТЕРАНЛЫҠ** *и.* Протестантизмдың Мартин Лютер тәғлимәте нигеҙендә 16 быуатта барлыҡҡа килгән бер ағымы.

**ЛЮ́ТИК** [*рус.*] *и.* **1.** Йылтыр һары ваҡ сәскәле ағыулы үлән. *Ағыулы лютик. Алтын лютик. Лютик елбәгәйе. Үрмәлсән лютик. Һаҙ лютигы.*

**2. лютиктар, лютик һымаҡтар** *бот.* Лютик, пион һ. б. үҫемлектәр ғаиләһенең атамаһы.

**ЛЮЦЕ́РНА** [*рус.* 〈 *лат.*] *и.* Ҡуҙаҡлылар ғаиләһенә ингән тарбаҡ һабаҡлы, һәр һабағында өсәр оҙонса япраҡлы күп йыллыҡ йәки бер йыллыҡ үлән (мал аҙығы итеп ҡулланыла). *Люцерна баҫыуы. Люцерна бесәне. Люцерна сәскәһе.* ■ *Люцерна .. һалҡынға, королокка сыҙамлы, әрһеҙ үҫемлек. Ҡомло, балсыҡлы, ташлы, хатта тоҙло тупраҡта ла үҫә.* «Совет Башҡортостаны», 1969, 20 сентябрь.

**ЛЯ́ПИС** [*рус.* 〈 *лат.*] *и.* Төҫһөҙ кристалик онтаҡ (микробҡа ҡаршы һәм яра көйҙөргөс сара итеп ҡулланыла).

# М

**М** [эм] Башҡорт алфавитының ун етенсе хәрефе.

**МАБАЙНА** [*ғәр.*] *с. иҫк. кит.* Аңлайышлы, асыҡ. *Мабайна хәл.* // *Ул миңә эштең калай икәнен мабайна һөйләне.*

**МАБИҺИЛИФТИХАР** [*ғәр.*] *и. иҫк. кит.* Маҡтанырлыҡ нәмә. *Билдәле беҙҙең мабиһилифтихар — ул мөхтәрәм ҙур шагир.* Ш. Бабич.

**МАВЗОЛЕ́Й** [*рус.* 〈 *лат.*] *и.* Ҡәбер өҫтөнә һалынған архитектура ҡоролмаһы. *В. И. Ленин мавзолейы.* ■ *Республика газеталарының берәһендә Шишмә районындағы Хөсәйен һәм Тархан мавзолейҙары тураһында мәҡәлә баҫылып сыҡты.* Н. Мәжитов.

**МАГАЗИ́Н** [*рус.* 〈 *фр.*] *и.* **1.** Халыҡҡа кәрәк-яраҡ һата торған сауҙа ойошмаһы һәм шул ойошма урынлашҡан бина. *Аҙыҡ магазины. Кейем магазины.*

**2.** *махс.* Приборҙағы бер иш нәмәләрҙе эсенә йыйып, тейешле урынға биреп тороу өсөн ҡулайлаштырылған ҡумта. *Фотоаппарат магазины.* ■ *Автоматчиктарҙың бөтә нәмәһе әҙер, патрон тултырылган магазиндар ҡуйылған.* Ш. Бикҡол.

**3.** *умарт.* Даданға өҫтәп ҡуйыла торған йәшник.

**МАГИ́СТР** [*рус.* 〈 *лат.*] *и.* **1.** Ҡайһы бер сит илдәрҙәге һәм революцияға тиклемге Россияла ғилми дәрәжә һәм шул дәрәжәне йөрөткән кеше.

**2.** *тар.* Урта быуаттағы монахтар йәки рыцарҙар ордены башлығының титулы һәм шул титулды йөрөткән кеше.

**МАГИСТРА́ЛЬ** [1] [*рус.* 〈 *лат.*] *и.* **1.** Хужалыҡ әһәмиәтенә эйә булған ҙур юл; оло юл. *Тимер юл магистрале. Агиҙел минең һыу магистрале.* ■ *Милиция эшмәкәрлегендә ҡала һәм ауылдарҙа, йәмәғәт урындарында, транспорт магистралендә өлгөлө тәртипте тәьмин итеү төп хәстәрлектәрҙең береһе булып тора.* «Совет Башҡортостаны», 1986, 29 ғинуар. / Ҙур ҡалаларҙағы оло урам. *Киң магистраль.*

**2.** Электр, телеграф, телефон, канализация, һыу, газ һ. б. нәмә үткәрә торған селтәрҙәге оло сым йәки оло торба. *Газ магистрале. Ер аҫты магистралдәре.* ■ *Башҡортостан нефте һәм нефть продукттары оҙон торба магистралдәре буйлап .. Көнсығыш Европа ҡалаларына хәтлем барып етә.* Р. Хәкимов.

**МАГИСТРА́ЛЬ** [2] [*рус.* магистральный] *с.* Магистралгә бәйләнешле; оло, үҙәк. *Магистраль канал.*

**МАГИСТРА́Т** [*рус.* 〈 *лат.*] *и.* **1.** Ҡайһы бер көнбайыш Европа илдәрендә ҡала идараһы һәм шул идара урынлашҡан йорт.

2. Россияла Пётр I-нән алып 1885 йылға тиклем суд, администрация һәм һалым йыйыу эштәрен алып барырға һайлап ҡуйылған ҡала идараһы.

**МАГИСТРАТУ́РА** [*рус.* ⟨ *лат.*] *и.* **1.** Ҡайһы бер буржуаз илдәрҙә һәм революцияға тиклемге Россияла суд ведомствоһындағы вазифалы кешеләр.

**2.** *тар.* Боронғо Римда иң юғары хөкүмәт вазифаһы биләгән кешеләр төркөмө.

**МА́ГМА** [*рус.* ⟨ *гр.*] *и. геол.* Ерҙең иң тәрән ҡатламында барлыҡҡа килгән утлы шыйыҡ матдә. *Ҡалын ҡатламдарҙы ярып, Ер ҡабығы аҫтынан ҡайнар магма бәреп сыҡҡан. Һыуынғандан һуң магма шул ҡатламдар эсендә ҡатып ҡалған.* Д. Бураҡаев.

**МАГМАЛЫ** *с. геол.* Магма ҡатнашҡан, магманан торған. *Магмалы тау тоҡомдары.*

**МАГМАТИК** *с. геол.* Магманан барлыҡҡа килгән. *Магматик тау тоҡомо.*

**МАГНА́Т** [*рус.* ⟨ *лат.*] *и.* **1.** Ҡайһы бер Европа илдәрендә эре ер биләүсе; эре феодал. *Польша магнаттары.*

**2.** Эре капиталист. *Нефть магнаты. Финанс магнаты.*

**МАГНЕ́ЗИЙ** [*рус.* магнезия ⟨ *лат.*] *и.* Магний әсемәһенең элекке атамаһы. *Аҡ магнезий.*

◆ **Яндырылған магнезий** аҡ онтаҡ рәүешендәге магний әсемәһе (медицинала ҡулланыла).

**МАГНЕЗИ́Т** [*рус.*] *и.* Магнийҙың углекислый тоҙо, аҡ йәки һары төҫтәге минерал.

**МАГНЕТИ́ЗМ** [*рус.* ⟨ *фр.*] *и.* **1.** Магниттың һәм электрлы сымдың ҡайһы бер есемдәрҙе тарта йәки этә торған үҙенсәлеге. *Ҡуҡ есемдәренең магнетизмын асыҡлау.*

**2.** Есемдәрҙең магнит күренештәре һәм үҙенсәлектәре тураһындағы тәғлимәт. *Магнетизм курсы.*

◆ **Ер магнетизмы** 1) *физ.* Ер шары тирәһендә магнит ҡыры булыу үҙенсәлеге; 2) геофизиканың Ерҙең магнит үҙенсәлеген өйрәнә торған бүлеге.

**МАГНЕ́ТИК** *с.* Магнетизмға мөнәсәбәтле. *Магнетик тәьҫир.*

**МАГНЕТИ́Т** [*рус.*] *и.* Магнит үҙенсәлектәре булған тимер ҡатнаш минерал. *Магнетит — ҡара төҫлө минерал. Уның яртыһынан күбеһе — тимер. Ул ер аҫтында, ергә магмалар йырып ингән урындарҙа барлыҡҡа килгән.* Д. Бураҡаев.

**МАГНЕ́ТО** [*рус.*] *и.* Эске яныулы двигателдәрҙә осҡон барлыҡҡа килтереп, яғыулыҡты тоҡандырып ебәреү өсөн хеҙмәт иткән алмаш ток генераторы.

**МА́ГНИЙ** [*рус.* ⟨ *лат.*] *и.* Химик элемент, ап-аҡ булып яна торған еңел, йомшаҡ аҡ металл.

**МАГНИ́Т** [*рус.* ⟨ *гр.*] *и.* Ҡайһы бер есемдәрҙе тартыу йәки этеү үҙенсәлегенә эйә булған есем. *Тәбиғи магнит. Яһалма магнит. Магнит рудаһы.*

◆ **Ерҙең магнит ҡыры** *физ.* Ер тирәһендә магнитлы сфера рәүешендә барлыҡҡа килеп, үҙэге Ерҙең әйләнеш үҙэге менән 11°5, мөйөш яһап торған магнит ҡыры. **Ерҙең магнит полюсы** *физ.* Ер шарында магнит теле вертикаль хәлгә килә торған нөктә. **Магнит аномалияһы** *физ.* Ер шарының ҡайһы бер урындарында Ерҙең магнит ҡыры көсөргәнешенең бик ныҡ үҙгәреүе. **Магнит ҡыры** даими магнит йәки электр сымы тирәһендә магнит көсөнөң тәьҫире беленгән араүыҡ. **Магнит меридианы** *физ.* магнит ҡырындағы көс һыҙығының проекцияһы рәүешендә ер өҫтөнә төшөрөлгән фарази һыҙыҡ.

**МАГНИТЛАНДЫРЫУ** *к. ҡар.* **магнитлау.**

**МАГНИТЛАНЫУ** *к. төш. ҡар.* **магнитлау.** *Магнитланған металл.*

**МАГНИТЛАТЫУ** *к. йөкм. ҡар.* **магнитлау.**

**МАГНИТЛАУ** *к.* Берәй нәмәгә магнит үҙенсәлеге биреү.

**МАГНИТЛЫ** *с.* Магнит үҙенсәлегенә эйә булған. *Магнитлы антенна. Компастың магнитлы теле.*

**МАГНИТО́МЕТР** [*рус.* ⟨ *гр.*] *и.* Магнит ҡырының көсөргәнешен һәм есемдәрҙең магнит үҙенсәлеген үлсәй торған прибор.

**МАГНИТОФО́Н** [*рус.*] *и.* Магнитлы таҫмаға йәки сымға тауышты яҙып, яңынан ишеттерә торған аппарат. *Магнитофон таҫмаһы. Магнитофонға яҙыу.* ■ *Экспедиция тарафынан ошо көнгә тиклем беленмәгән бик күп көй магнитофонға яҙылды.* М. Сәғитов.

**МАГНО́ЛИЯ** [*рус.* ⟨ *фр.*] *и.* Хуш еҫле, эре аҡ сәскәле көньяҡ ағасы йәки ҡыуағы. *Унан шағир һиңә иҫтәлеккә магнолиялар килде күтәреп.* Х. Ҡунаҡбай.

**МАҒЖУН** [*ғәр.*] *и. иҫк.* Мәк орлоғо, эфиун һ. б. төр наркотиктар ҡушып, иҙеп яһаған дарыу. *Өҫтәл өҫтөндә, туҡмаҫҡа тип баҫып ҡуйған ҡамыр кеүек ҡыҙыл бер нәмә тора. Быны магжун тиҙәр. Ошо магжундан һәр кемгә берәр борсаҡ ҡәҙәре генә биреп торалар.* М. Ғафури.

**МАҒРУЗА** [*ғәр.*] *и. иҫк. кит.* Тикшереү өсөн тәҡдим ителгән фекер; доклад, проект. *Хуш хәҙер, ҡайтҡас уҡырмын мағруза.* Ш. Бабич.

**МАДАМКИ** [*фарс.*] *терк. иҫк. кит.* Тимәк. *Мин мадамки хөр икән, ник тарһынайым ыҫпай йөрөп.* Ш. Бабич.

**МАДАПОЛА́М** [*рус.* ⟨ *фр.*] *и.* Беше кизе-мамыҡ туҡыма. *Аҡ мадаполам. Күкшел мадаполам. // Мадаполам күлдәк.*

**МАДЬЯ́Р** *и.* Венгрҙар үҙҙәрен атап йөрөткән исем.

**МАДӘМ** [*ғәр.*] *р. иҫк. кит.* Һәр ваҡыт. *Ник улай тиһең, тегеләр фәҡир заләләттә мадәм.* С. Яҡшығолов.

**МАҘА** [1] [*фарс.*] *и.* Тыныслыҡ кисереүҙән килгән рәхәтлек; йән тыныслығы. **Маҙа бирмәү** *йәки* **маҙаға тейеү** тыныслыҡ бирмәй йонсотоу; тынысһыҙлау. *[Атаһы — Нәркәскә:] Ҡабат Шулгән буйында һине атыр ир булмаҫ, маҙаңа ла тейерҙәй тирә яҡта йән булмаҫ.* «Аҡбуҙат». **Маҙаны алыу** (*йәки* **боҙоу**) *йәки* **маҙа китәреү** тыныслыҡты алыу; тынысһыҙлау. *Ҡайһы бер саҡта Ләйлә еңел бер йоҡоға киткән була, күп тә үтмәй, теге йүтәл килеп, уны уята, маҙаһын ала.* М. Ғафури. *Аттарҙың боҙҙо маҙаһын уткүҙ себен, бөгәләк.* Б. Бикбай.

**МАҘА** [2] [*ғәр.*] *и. диал.* Ҡыйынлыҡ килтергән мәшәҡәт.

**МАҘАҠАЙ** *с. диал.* **1.** *ҡар.* **насар** 1, 2.

**2.** Әһәмиәтһеҙ.

**МАҘАҠАТЛЫ** *с. диал. ҡар.* **насар** 1, 2.

**МАҘАЛАНЫУ** *к.* Ҡыйынлыҡ, мәшәҡәт кисереү; аҙапланыу. *Ғимаҙи ҡарт ашығып, күлдәгенең иҙеүен артҡа кейеп маҙаланды.* С. Ҡудаш.

**МАҘАЛАУ** *к. диал.* Маҙаһыҙлау.

**МАҘАЛЫ** *с.* Нимәләр өсөн борсолған, тынғы белмәгән. *Кешегә ышанмай, шик һәм шөбһә тотоп, сер менән серләшеп йәшәгән маҙалы әҙәмдең ҡаҙаһы ла үҙенән.* Ғ. Хөсәйенов.

**МАҘАР** [*ғәр.*] *и. иҫк.* Зыярат, ҡәберлек. ● *Балалы өй — баҙар, балаһыҙ өй — маҙар.* Әйтем.

-**МАҘАР** *киҫ.* Ҡайһы бер һүҙгә ҡушылып, билдәһеҙлек мәғәнәһен бирә. *Ит-маҙар. Кеше-маҙар.* ■ *Йәш килен, бала кеше, белеп еткермәй, үҙенең йөҙөктәрен алып килмәһә-маҙар тип, [Йомай әбей] үҙе әҙерләп ҡуйған бер бау йөҙөктәрен сығарып, кеҫәһенә һала торҙо.* Һ. Дәүләтшина.

**МАҘАТЫУ** *к. диал.* Маҙаһыҙлау.

**МАҘАУ** *к.* Ойоп ҡатыу (аяҡ-ҡулға ҡарата). *Аяғым маҙап киткән.*

**МАҘАҺЫҘ**[1] *с.* Маҙа[1] белмәгән, көйһөҙ. *Өләсәйем өсөн мин һаман манный бутҡаһы яратмай торған маҙаһыҙ иркә бәпес .. булып ҡалдым.* З. Биишева.

**МАҘАҺЫҘ**[2] *с. диал.* Мәшәҡәтһеҙ. *Маҙаһыҙ эш.*

**МАҘАҺЫҘЛАНЫУ** *к.* Тыныслыҡ юғалтыу; тынысһыҙланыу.

**МАҘАҺЫҘЛАУ** *к.* Кешенең маҙаһын алыу, тынысһыҙлау; бимазалау. *[Ғәйшә:] Йә, ярар, йоҡолары туймаһа, ятһындар, ниңә уларҙы ҡайта-ҡайта маҙаһыҙлайһың?* Һ. Дәүләтшина.

**МАҘРАУ** *к.* Иркенлек, рәхәтлек тойғоһо кисереү, нимәгәләр ҡәнәғәт булып кинәнеү. *Ниязгол бай нисә йылдар инде ошо матур ерҙәрҙә үҙе баш, үҙе түш булып, маҙрап йәшәй.* Һ. Дәүләтшина. *Иртә намаҙға тороп, кире ятҡан Аралбай ҙа, Ҡәмәр әбей ҙә оҙаҡ итеп маҙрап йоҡланы.* Ғ. Дәүләтшин.

**МАЁВКА** [*рус.*] *и.* Революцияға тиклемге Рәсәйҙә эшселәрҙең 1-се Майҙа ойоштора торған йәшерен йыйылышы. *Өфө Тимер юлсылары полицияның эҙәрләүенән йәшенеп, маёвканы Ағиҙел яры буйындағы урманда үткәрә.* «Совет Башҡортостаны», 1966, 1 май.

**МАЖАР** *и. иҫк.* Мадьяр.

**МАЖАРА** [*ғәр.*] *и.* Нимәгәләр бәйле ҡыҙыҡлы йәки ҡыҙғаныслы шау-шыулы хәл, ваҡиға. *Юл мажаралары. Туй мажаралары.* ■ *[Һунарсылар] үҙ башынан үтмәгән мажараларҙы ла .. үҙе күргән, үҙе белгән әңгәмә итеп һөйләргә яраталар.* С. Кулибай. *Һәр баҫҡаны һайын мажара һәм шаҡ ҡатырлыҡ ваҡиға эҙләгән репортёр, күптән уянған булһа ла, ниндәй ҙә булһа бер күңел асырлыҡ нәмә эҙләп, урынынан тормай ята ине.* И. Насыри. **Мажара ҡуптарыу** (*йәки* **сығарыу**) буштан ғына шау-шыу күтәреп, бола сығарыу.

**МАЖАРАЛЫ** *с.* **1.** Төрлө мажаралар булған, шау-шыулы. *Мажаралы ваҡиға.*

**2.** Ҡыҙыҡ ваҡиғаларҙан ғибәрәт. *Мажаралы әҙәбиәт. Мажаралы әҫәр.*

**МАЗ: маз булыу** *шул уҡ* **мас булыу** (*ҡар.* **мас**[1]).

**МАЗЛУМ** [*ғәр.*] *с.* Төрлө яҡлап йәберләнгән, иҙелгән, кәмһетелгән. *Мазлум йән. Мазлум булыу. Мазлум ителеү. // Мазлумдарҙы яҡлау.* ■ *Күпме мазлум йәше аҡты һинең золомоң менән! Күпме бәндә китте, үлде һарғайып зар-моң менән.* М. Ғафури. *Һыҙ ҙа үткер алмасыңды, киҫ яуыз көс пәрҙәһен! Ятмаһын ҡан дарьяһында ярлы мазлум кәрҙәшең!* Д. Юлтый.

**МАЗО́К** [*рус.*] *и.* Микроскоп аша тикшереү өсөн ауырыу кешенең тамағынан, танауынан һ. б. урындан алынған лайлалы шыйыҡса. *Мазок алыу. Мазокты тикшереү.* ■ *Балала хромосомдың артыҡ йәки кәм булғанын белеү өсөн ауыҙҙан алынған мазок тикшереп ҡарала.* «Ағиҙел», 1966, № 9.

**МАЗУ́РКА** [*рус.* ⟨ *пол.*] *и.* **1.** Поляктарҙың милли бейеүе һәм шул бейеүҙең музыкаһы.

**2.** Ошо бейеү ритмындағы музыкаль әҫәр. *Шопен мазуркаһы.*

**МАЗУ́Т** [*рус.*] *и.* Кәрәсин, бензин, газолин ҡыуғандан һуң ҡалған нефть ҡалдығы. *Мазутҡа буялыу.* ■ *Буксир пароходының .. машина бүлегендә һаҫыҡ мазут еҫе тамаҡты быуа.* Ә. Ихсан.

**МАЗУТЛАНЫУ** *к. төш. ҡар.* **мазутлау.** *Ул [Тимер] .. өҫтөнә мазутланган иҫке һырмаһын кейеп, өс ҡосаҡ оло күтәрем утын алып керҙе.* Б. Бикбай.

**МАЗУТЛАУ** *к.* Берәй нәмәгә мазут һөртөү, мазутҡа буяу.

**МАЗЫЙ** [*ғәр.*] *с. иҫк. кит.* Үткән, үтеп киткән [заман]. *[Шәкерт:] Шулай, Йәмил ҡаҙый, хәҙер һеҙҙең эш — мазый.* Ғ. Ғүмәр.

**МАЗЬ** *и. ҡар.* **май**[1] 4.

**МАИДӘ** [*ғәр.*] *и. иҫк. кит.* **1.** Дини әкиәттәрҙә һөйләнеүенсә, ҡом сәхрәһендә ҡалған йәһүдтәргә күктән килеп төшкән ашамлыҡ. *Шәриф менән Бәҙриҙең ике күҙе күктә ине. Аҙ ғына болот күренһә, Ғайса пәйғәмбәр ҡәүеменә төшкән маидә кеүек күреп шатланалар ине.* М. Ғафури.

**2.** Аш табыны.

**МАИЛ** [*ғәр.*] *с.* **1.** Берәй эшкә теләге булған, әүәҫ. *Йыр сығарыуға маил.* ■ *Хәниф .. Әнисәнең шаянға маил йөҙөнә, .. зифа буйына ҡараны.* Ф. Вәлиев.

**2.** Берәй нәмәгә тартым, оҡшаш. *Тирә яғыбыҙҙағы ағастар әҙ генә аҡҡа маил булып тора ине.* М. Ғафури.

**МАЙС** [*рус.* ⟨ *исп.*] *и. ҡар.* **кукуруз.**

**МАЙ**[1] *и.* **1.** Ҡаймаҡты туҡып, айранынан айырып алынған туҡлыҡлы аҙыҡ. *Аҡ май. Баллы май. Сейәле май. Тоҙло май. Йомғаҡлы май. Бер батман май. Май заводы. Май һауыты. Май тасҡау. Май йомарлау. Майға бешереү.* **Май бешеү** (*йәки* **яҙыу, төшөрөү**) ҡаймаҡты туҡып, май яһау. *[Гөлбоҫтан], иремә генә ашатырмын тип, ике йоманан бирле балаларынан ҡурсып йыйған ҡаймағын бешә һалып, май яҙҙы.* Ғ. Дәүләтшин. **Һары май** иретеп эшкәртелгән, айраны булмаған май. / Ҡайһы бер үҫемлектәрҙең орлоғонан, сәскәһенән һәм емешенән һығып алынған, иремәй торған ҡуйы шыйыҡса. *Көнбағыш майы. Мамыҡ майы. Горчица майы. Һарығат майы. Зәйтүн майы. Май үҫемлектәре. Май һығыу.*

**2.** Хайуан тәнендәге май ҡатлам һәм шунан

алынған продукт. *Ҡаҙ майы. Суҡа майы. Ҡарын майы. Оса майы. Эс майы.* **Туң май** һуғым эсенән алынған һәм иретелгән эс майы. *Картуфты туң майҙа ҡыҙҙырыу.*

**3.** Тере организм һәм үҫемлек туҡымаһында яһалған, һыуҙа иремәй торған матдә. *Балыҡ майы. Үҫемлек майы. Май биҙҙәре. Май күҙәнәге.*

**4.** Тәнгә һөртә торған шифалы ҡуйы матдә. *Бит майы. Камфара майы. Көкөрт майы. Ҡул майы. Цинк майы.* / Ышҡылмаһын йәки тутыҡмаһын өсөн төрлө ҡорал-ҡорамалға һөртә торған ҡуйы матдә. *Автол майы. Машина майы. Солидол майы. Тәгәрмәс майы.*

**5.** Нефттән алынған төрлө яғыулыҡ. *Дизель майы. Соляр майы.*

◆ **Айыу майы һөртөү** *ҡар.* **айыу. Ауыҙыңа бал да май** *ҡар.* **ауыҙ. Ауыҙы тулы май булһын** муллыҡ, байлыҡ теләп әйтелә. **Елек майын һурыу** *ҡар.* **елек. Еҫле май** 1) үҙенә башҡа бер төр гөлйемеш сәскәһенән алынған матдә (хушбуй яһауҙа ҡулланыла); 2) *күсм.* хушбуй. *Еҫле майҙың еҫе сыҡмай, әллә мисәтләнгәнгә* (Халыҡ йырынан). **Ер майы** 1) нефть. *Ишембай тирәһендә нефть эҙләйҙәр, ти. Нефть бар инде унда. .. Беҙ бәләкәй саҡта уҡ кешеләр ниндәйҙер ер майы менән күсәр майлайҙар, тип һөйләй торғайнылар.* Б. Бикбай; 2) кәрәсин. *[Атаһы:] Асынғандан әйтәм инде. Еткереп булмай бит. Әле ер майы, әле шырпы, әле тоҙ бөтөп кенә тора.* Ғ. Ғүмәр. **Йөрәк майы һыҙылыу** (*йәки* **һыҙыу**) әрнеү, һыҙланыу (тойғоға ҡарата). *Ғишҡы янһа, егет түҙмәй, тиҙәр, йөрәк майғынаһы һыҙа икән* (Халыҡ йырынан). **Кәзә майын сығарыу** *ҡар.* **кәзә. Ҡырмыҫҡа майы** ҡырмыҫҡаның иләү эсенә йыйған аҡ май,кеүек аҙығы. **Май бөрөү** 1) бик ныҡ һимереү. *Ауыр эшкә егелмәй, илке-һалҡы ғына йөрөтөлгәнлектән май бөргән [аттың] эсен, һимеҙ.* Б. Бикбай; 2) *күсм.* үтә ныҡ байып, һаранайыу. **Майҙа йөҙөү** рәхәт тормошта йәшәү. **Май кеүек ireү** 1) һыуыҡтан йылыға ингәс, рәхәтлек кисереү; 2) йылы һүҙҙән рәхәтләнеп ирәйеү. *Ҡарттың аҡылын, яҡшылығын маҡтап, Татлыбай бер нисә йыр әйтеп бирҙе. Маҡтауҙы яратҡан Аралбайҙың күңеле май кеүек иреп китте.* Ш. Шәһәр. **Май һымаҡ йомшарыу** (*йәки* **булыу**) үҙгәреп, ыңғайға килеү (кешегә ҡарата). **Майһыҙ ҡалаҡ ауыҙҙы йырта** кешенең күңелен күрмәйенсә, йомошто йомошлап булмай, тигән мәғәнәлә әйтелә. **Май шәм** парафин эсенә филтә ҡуйып яһалған шәм. *Ярлы булып, һаҫыҡ май шәм яғып, ғүмер иткән халыҡ уфтанып.* Х. Ҡунаҡбай. **Майына сыҙамау** (*йәки* **һыйыша алмау**) рәхәт тормоштан шашыу, ҡотороу. *[Фронтовик:] Сәлимгәрәй байҙың ауыҙына сүбәк тығыр ваҡыт етте, егеттәр! Беҙ фронтта, окоптарҙа сереп яттыҡ. Улар бында майҙарына һыйыша алмай!* А. Карнай. **Май эсендәге бөйөр һымаҡ** ҡытлыҡ, ҡыйынлыҡ кисермәй; етеш, рәхәт. *Май эсендәге бөйөр һымаҡ йәшәү.* **Тау майы** ҡая һәм тау-таш ярыҡтарынан һарҡып сыҡҡан ыҫмала һымаҡ тәбиғи матдә (медицинала һынған һөйәкте уңалтыу, үпкә һәм тын юлдарын һ. б. дауалау өсөн ҡулланыла); мумия. **Шәм майы** *иҫк.* кәрәсин.

● *Май сүлмәге тышынан билдәле.* Мәҡәл. *Һөйәк сәйнәп май сыҡмаҫ.* Әйтем. *Һыу яҙып, май төшмәҫ.* Әйтем.

**МАЙ**² [*рус.* ‹ *лат.*] *и.* Календарь йылының бишенсе айы. *Май иртәһе. Май ямғыры.* **Беренсе май** 1889 йылда 2-се Интернационалдың конгресы тарафынан билдәләнгән халыҡ-ара хеҙмәтсәндәр байрамы. *Беренсе Май байрамы.* **Май ҡуңыҙы** йәшкелт-көрән төҫтәге эре яҙғы ҡуңыҙ.

**МАЙҘАН** [*фарс*] **1.** Ҡала йәки ауыл эсендәге асыҡ тигеҙ урын. *Ҡала майҙаны. Вокзал майҙаны.* ■ *Байрам һайын Ҡыҙыл майҙан аша күкрәп үтә бөтә илебеҙ.* Ғ. Сәләм.

**2.** Берәй нәмә өсөн тәғәйенләнгән йәки ниндәйҙер эш алып барылған урын, ер. *Аэропорт майҙаны. Спорт майҙаны. Төҙөлөш майҙаны.* / *күсм.* Киң күләмдә алып барылған ниндәй ҙә булһа эш өлкәһе. *Хеҙмәт майҙаны.* ■ *Мине яңы .. тормош, киң эш майҙаны шатлыҡ менән ҡаршы алды.* Ғ. Хәйри. *Көрәш тарихының сәңгелдәге .. беҙҙе үҫтереп, көрәш майҙанына бүләк итә.* Ғ. Амантай. **Майҙанға саҡырыу** эшкә, көрәшкә өндәү. *Закир һымаҡ егеттәрҙе өйҙә яткырып ҡуя торған заман инеме ни? Бына тиҙ арала көрәш уны майҙанға саҡырҙы.* З. Биишева.

**3.** Берәй нәмә биләп ятҡан ҙур күләмле урын, ер. *Баҫыу майҙаны. Урман майҙаны. Өс йөҙ гектарлыҡ сәсеү майҙаны.*

**4.** Күмәк халыҡтың митинг үткәреү, һөйләшеү, күңел асыу һ. б. өсөн тәғәйенле урыны. *Һабантуй майҙаны. Халыҡты майҙанға йыйыу.* ■ *Унда майҙанда, көрәшә һәр талапкар, көсләләр..* Ш. Бабич. *Майҙанда бәйге башлана, батша аты менән Батыр Мәргән аты сабыштарға китә* (Әкиәттән).

**5.** Күңел асыу йәки кәңәшләшеп һөйләшеү өсөн ойошторолған ҙур йыйын. *Майҙан йыйыу. Майҙан асыу.* ■ *[Мәсем хан:] Майҙан йыйҙы ил данлап, ҙур ҡыуаныс булғанға.* «Аҡбуҙат». / Шул йыйындағы күмәк халыҡ. *Майҙан дыу килеп, ҡул сәпәкәйләне, Сәлим .. йырларға тотонды.* И. Насыри.

◆ **Майҙан алыу** көрәшеп еңеү. *Ҡыйғыр ыласын һымаҡ осҡан ҡоштай, алдында майҙан алған егет тора.* «Алпамыша». **Майҙанға баҫыу** (*йәки* **сығыу**) 1) ярышып, көс һынашырға халыҡ алдына сығыу; 2) *күсм.* илгә күренерлек ҙур эшкә тотоноу. *Хәҙер «мин» юҡ, беҙ икәүбеҙ майҙанға беҙ баҫтыҡ гөрләшеп, .. бергә ил төҙөйбөҙ.* Б. Ишемғол. **Майҙанға килеү** барлыҡҡа килеү, донъяға килеү. **Майҙанға ҡуйыу** көн тәртибенә ҡуйыу. *Һуғыш башланған көндө уҡ Ленинградты һаҡлау мәсьәләһе майҙанға ҡуйылды.* **Майҙан тотоу** 1) халыҡ алдында телмәр һөйләү; 2) ярышта өҫтөн сығыу, еңеү. *[Мәсем хан:] Илем данлап майҙан йыйғанмын, майҙан тотҡан батыр егеткә ҡыҙым бирәм тип, вәғәҙә иткәнмен.* С. Мифтахов. **Һуғыш майҙаны** һуғыш барған урын. .. *Һуғыш майҙанының тап уртаһылыр ир егет урыны.* М. Ғафури.

**МАЙҘАНСЫҠ** *и.* Берәй нәмәгә тәғәйенләп, кәрәгенсә йыһазландырылған ҙур булмаған урын. *Балалар майҙансығы. Мәктәп майҙансығы. Спорт майҙансығы. Танса майҙансығы.*

**МАЙҘИГӘС** *и. диал.* Ҡарабаш турғай (*ҡар.* **турғай 1**). *Шыҡыр-шыҡыр итте һайыҫҡан, май-*

*ҙигәстәр сут-сут көлдөләр.* К. Кинйәбулатова.

**МАЙКА** [*рус.*] *и.* **1.** Ҙур итеп уйылған яғалы, еңһеҙ, эстән кейә торған йоҡа бәйләм күлдәк. *Тәнен баҡырлаган май кояшы, майка әҙе саҡ-саҡ беленә.* Б. Бикбай.

**2.** *диал.* Кофта.

**МАЙКАУ** *к. диал.* Байҡау. *[Ҡыҙрас:] Үҙ хужалыгымда ни эшләнгәнен белергә тейешмен майкап.* Я. Вәлиев.

**МАЙКЫМ** *с. диал. кар.* **былҡы** 2.

**МАЙКЫМЛАНЫУ** *к. диал. кар.* **былҡыланыу** 2.

**МАЙЛАҒЫС** *и.* **1.** Ниҙе лә булһа майлай торған нәмә (сепрәк, ҡауырһын); май һөрткөс. *Икмәк майлагыс. Таба майлагыс.*

**2.** Машина майлай торған һемәкле һауыт.

**МАЙЛАНДЫРЫУ** *к.* Майлы итеү, май менән бысратыу. *Өҫ-башты майландырып бөтөрөү.*

♦ **Күҙҙе майландырыу** берәй нәмәгә нәпсе менән ҡарау.

**МАЙЛАНЫУ** *к.* **1.** *төш. кар.* **майлау** 1. *Майланган коймак.*

**2.** *кайт. кар.* **майлау** 1. *Исправник кеҫәһенән мыйыҡ щеткаһын алды ла майланып, кыяга таралган сәсен һыйпаштырҙы.* Т. Хәйбуллин.

**МАЙЛАП-БАЛЛАУ** *к. һөйл.* Май, бал ҡушыу. *Майлап-баллап сәй эсеү.*

**МАЙЛАТЫУ** *к. йөкм. кар.* **майлау.**

**МАЙЛАУ** *к.* **1.** Ашау-эсеүгә бәйле нәмәне майлы итеү, май яғыу. *Коймак майлау. Майлап сәй эсеү.* / Матурлау, ялтыратыу өсөн май һөртөү. *Итекте майлау.* ■ *Зәйнәп туташ кара сәсен майлап тора, Былбыл кеүек, сәскә тотоп, һайрап тора.* Б. Бабич. *Һатыусынан тарак алдым, сәскәйемде майлап тарарга* (Халыҡ йырынан).

**2.** Төрлө механизмдар тутыҡмаһын һәм еңел хәрәкәт итһен өсөн май һөртөү. *Тәгәрмәсте майлау. Йоҙакты майлау.* ■ *— Корал майлаганды һәм йәйлаганды ярата,— тип иҫкәртте Ваня агай.* Ә. Бикчәнтәев.

**3.** *кусм. һөйл.* Үҙ файҙаңа ыңғайлатыу өсөн берәй нәмә менән кешенең күңелен күреү. *Улар [байҙар] эште шыма йөрөттөләр, алдан уҡ старшинаны майлап, старшина аркыры комиссиялагы начальниктар һәм врачтарҙы көйләп котолоп калдылар.* И. Көҫәпҡол.

♦ **Майлаған һымаҡ булыу** тәкитләгәндән йәки берәй сара күреп күңелен тапҡандан һуң йомшарып, ыңғайға килеү. **Майлап ташлаһаң, эт яламаҫ** төҫөнә ҡарағыһыҙ, бик насар тигән мәғәнәлә әйтелә. *Хәлимәне генә алып кара: кейәүгә сыкканга тиклем майлап ташлаһаң, эт яламаҫ нәмә ине, ана кайһылай булып китте. Танырлык та түгел.* Ш. Шәһәр. **Уксә майлау** ҡасыу, сығып китеү. *Буржуй, кулак һеҙгә әйтәм: совет властары керҙе, уксәгеҙҙе майлагыҙ* (Халыҡ йырынан).

**МАЙЛАУСЫ** *и.* Майлау (2 мәғ.) эшендәге эшсе.

**МАЙЛАШЫУ** *к. урт. ярҙамл. кар.* **майлау** 1, 2.

**МАЙЛУТ** *и.* Әүернә сәскәләләр ғаиләһенә ҡараған тарбаҡ ботаҡлы, аҡ сәскәле, эре һутлы япраҡлы үлән. *Майлут сәскәһе.*

**МАЙЛЫ** *с.* **1.** Майҙа бешкән, май һалынған, май яғылған. *Майлы бутка. Майлы коймак.* / Май һеңгән, май тейгән. *Майлы кагыҙ. Майлы кул.* / Майға иҙелгән, май ҡушып эшләнгән. *Майлы буяу. Майлы крем.*

**2.** Май һөртөлгән, майланған (2 мәғ.). *Майлы тәгәрмәс.*

**3.** Майы (2 мәғ.) булған, һимеҙ. *Майлы ит. Майлы калъя.*

**4.** Орлоғонда йәки емешендә майы булған, май бирә торған. *Майлы үҫемлек. Майлы культуралар.*

♦ **Майлы бутҡа түгел** *кар.* **бутҡа. Майлы күҙ** нәпселәнеп, ялтырап торған күҙ.

**МАЙЛЫҠ** *и. диал.* Ашағанда һөртөнә торған ҡул таҫтамалы. *Кулды майлыкка һөртөү.*

**МАЙМУЛ** *и. кар.* **маймыл.**

**МАЙМЫҠ** *с. диал.* Майрыҡ. *Йәш малдың биле маймык була, шуга күрә конан атты оҙак юлга менмәйҙәр.* Т. Морат.

**МАЙМЫЛ** [*фарс.*] *и.* **1.** Тән төҙөлөшө менән кешегә иң яҡын торған һөтимәр йәнлек.

**2.** *с. мәг.* Шул йәнлектең тиреһенән тегелгән. *Көҙгө алдында сибәр кыҙ одеколон, пудра һөртөнә. Маймыл ягалы якшы тунга, ебәк күлдәктәргә төрөнә.* Ғ. Хәйри.

**3.** Ҡылансыҡ кешегә ҡарата әйтелә.

♦ **Маймыл йылы** ун ике йыллыҡ мөсәлдең туғыҙынсы йылы.

**МАЙМЫЛЛАНЫУ** *к.* Борғоланған, һырғаланған булып, төрлөсә ҡыланыу, ҡылансыҡланыу. *Маймылланып ултырыу.* ■ *[Карты тураһында Ҡаҙиса:] — Ҡуй, уның маймылланыуын һанап бөтөрлөк түгел. Торганы кәмит, валлаһи!* В. Нафиков.

**МАЙМЫС** *и. диал.* Селбәрә.

**МАЙНА** [*рус.* ⟨ *итал.*] *ымл.* Йөк тейәүсе, крансы, төҙөүсе, моряк һ. б. телендә йөрөгән, «түбәнгә!», «төшөр!» тигән мәғәнәләге команда; *киреһе* вира.

**МАЙОНЕЗ** [*рус.* ⟨ *фр.*] *и.* Йомортҡа һарыһы, горчица, һеркә, үҫемлек майы һәм башҡа аш тәмлеткестәр ҡатнаштырып яһалған соус. *Салатка майонез һалыу.*

**МАЙОР** [*рус.* ⟨ *лат.*] *и.* Капитандан юғары, подполковниктан түбән булған хәрби дәрәжә һәм шул дәрәжәләге офицер. *Майор дәрәжәһе.* ■ *Һугыш бөтөр алдынан Шәмиголов армиянан кайтты. Был вакытта инде ул кукрәгендә ике орден һәм өс медаль балкып торган олпат майор ине.* Ә. Вәли.

**МАЙРЫҠ** *с. һөйл.* Кәүҙәгә бушаҡ, көсө әҙ; кәрһеҙ, былҡы. *Майрык кеше. Майрык булыу.*

**МАЙРЫҠЛАНЫУ** *к. һөйл.* Хәл бөтөп быуынһыҙланыу, майрыҡҡа әйләнеү. *Хәйретдин туктауы менән, арба тәртәләрен ергә куйып, майрыкланып ултырҙы.* А. Таһиров.

**МАЙСЫ** *и.* Май эшкәртеүҙә эшләгән эшсе. *Майсылар ярышка сыкты.*

**МАЙСЫБЫҠ** *и. диал.* Кейәү ҡамсыһы (*кар.* **ҡамсы 1**).

**МАЙСЫЛ** *и. диал.* Ҡарабаш турғай (*кар.* **турғай** 1).

**МАЙТУС** *и. диал.* Байтус.

**МАЙҺЫҘ** *с.* **1.** Майы (1 мәғ.) булмаған, ҡоро. *Майһыҙ ҡоймаҡ. Майһыҙ бутҡа.*

**2.** Майы (3 мәғ.) булмаған, ябыҡ. *Майһыҙ иг.*

**3.** Май (4 мәғ.) һөртөлмәгән, майланмаған. *Майһыҙ тәгәрмәс.*

● *Майһыҙ ҡоймаҡ шыумай.* Мәҡәл.

**МАЙЫМЛАУ** *к. диал.* Бүгеү. *Һимеҙ иг ашап майымлау.*

**МАЙЫРЫЛЫУ** *к.* Ҡыйшайып, йәмшәйеп рәүешен юғалтыу; йәнселеү. *Салғының йөҙө майырылған.* ■ *Көмөш тә генә йөҙөк, ҡуш беләҙек майырылмай торған булһасы* (Халыҡ йырынан).

**МАКАКА** [рус. ‹ *порт.*] *и.* Көньяҡ Азия һәм Төньяҡ Африкала йәшәгән бәләкәй кәүҙәле маймыл. *Макака балаһы.*

**МАКАРОН** [*рус.* макароны ‹ *ит.*] Нәҙәк кенә көпшә рәүешендә яһап киптерелгән туҡмас төрө. *Макарон фабрикаһы. Макарон бешереү.*

**МАКЕТ** [*рус.* ‹ *фр.*] *и.* Берәй нәмәнең бәләкәйәйтелгән өлгөһө. *Өй макеты. Самолёт макеты. Макет мастерскойы.* ■ *Стенаға автомашина һәм станок макеттары эленгән.* Н. Иҙелбай. / *полигр.* Газет-журналдың һыҙып билдәләнгән өлгөһө. *Редколлегия тәүҙә газетаның макетын төҙөй. Быны өсөн газета ҙурлығындағы бер бит таҙа ҡағыҙ алына. Уны бағаналарға бүлеп һыҙып сығалар.* «Башҡортостан уҡытыусыһы», 1965, № 4.

**МАКИНТОШ** [*рус.* ‹ *ингл.*] *и. иҫк.* Һыу үткәрмәй торған йоҡа пальто. *Рәжәпов өйгә ҡайтып, макинтошын һәйбәтләп кенә сөйгә элде.* С. Агиш.

**МАКИР** [*ғәр.*] *с.* Аҫтыртын яуыз. *Макир кеше. Макир дошман.* ■ *Макир килмешәктәрҙең йәнен ҡыйған Урал тау.* А. Игебаев.

**МАКЛЕР** [*рус.* ‹ *нем.*] *и.* Эре сауҙала, алыш-бирештә ике яҡты килештереп йөрөй торған кеше; аралашсы.

**МАКРОКОСМОС** [*рус.* ‹ *гр.*] *и. кит.* Донъя, йыһан.

**МАКСИМАЛЬ** [*рус.* максимальный ‹ *лат.*] *с.* Иң ҙур, иң юғары; *киреһе* минималь. *Максималь ауырлыҡ. Максималь тиҙлек. Максималь рәүештә файҙаланыу.*

**МАКСИМУМ** [*рус.* ‹ *лат.*] *с.* Иң күп, иң ҙур; *киреһе* минимум. *Максимум эш хаҡы.*

**МАКУЛАТУРА** [*рус.* ‹ *нем.*] *и.* Ҡағыҙ фабрикаларында яңынан эшкәртеү өсөн йыйылған ташландыҡ ҡағыҙ һәм ҡатырға. *Макулатура йыйыу. Макулатура тапшырыу.*

**МАҠАМ** [*ғәр.*] *и.* **1.** Йәшәгән урын; төйәк, торлаҡ. *Маҡам ҡороу. Маҡам ҡороп йәшәү.* ■ .. *Минә хәҙер заводҡа барып, берәй ай ярым эшләп, бәләкәс аҡса йүнәтергә, шунан торорға маҡам рәтләргә кәрәк.* Ж. Кейекбаев.

**2.** *һир.* Кешенең тотҡан урыны, дәрәжәһе. *Килбәте, тәүфиғы менән дә дин әһеленә оҡшап ҡына тора, маҡамы ла һәйбәт.* Ф. Рәхимғолова.

□ **Маҡам итеү** ғүмер итеү; донъя көтөү.

**МАҠАУ** *с.* **1.** Аҡыл һәләтлеге сикле, зирәк түгел; зиһенһеҙ, аңра. *Маҡау бала. Уҡырға маҡау булыу.* ■ *[Мостафа] ыҡ-мыҡ иткән маҡау Әптелгә ярҙам иткеләп, тегенең һүҙен йөпләп ултыра.* Ф. Иҫәнғолов. — *Их, маҡау,— тип ҡысҡырып ебәрҙе Егор.— Һин ике кешенең сикәләшеүен илдәр һуғышы менән сағыштырма!* Х. Мохтар.

**2.** *диал.* Наҙан. *Маҡау кеше.*

**МАҠАҺЫНЫУ** *к. диал.* Һанға алыу, тиңһенеү.

**МАҠБАЛ** [*ғәр.*] *и.* Берәй нәмәне семәрләү өсөн ҡулланылған биҙәкле ҡалай. *Кирәгәгә көмөшләнгән ике эйәр, йүгән, түйыр ҡамсы эленгән. Унан уңғараҡ матурлап ҡара маҡбал менән семәрләнгән һандыҡ .. ҡуйылған.* И. Көҫәпҡол.

**МАҠСАТ** [*ғәр.*] *и.* Алға ҡуйылған бурыс. *Төп маҡсат. Тормош маҡсаты. Маҡсатҡа ирешеү. Маҡсатты тормошҡа ашырыу.* ■ *Маҡсаттары шул: йорт яһау бик яҡты итеп.* Ш. Бабич. ■ *Социализм осоронда ижтимағи етештереүҙең иң юғары маҡсаты — кешеләрҙең үҫә барыусы материаль һәм рухи ихтыяждарын мөмкин тиклем тулыраҡ ҡәнәғәтләндереү.* Башҡорт АССР-ының Конституцияһы, 1984.

**МАҠСАТЛЫ** *с.* Ниндәй ҙә булһа бер маҡсатҡа йүнәлтелгән, билдәле бер маҡсатҡа хеҙмәт иткән. *Маҡсатлы эш.*

**МАҠСАТЫНДА** *бәйл. функцияһында* Төп килештәге исемдәрҙән һуң килеп, эш-хәрәкәттең ниндәйҙер маҡсат менән үтәлеүен белдерә; өсөн. *Социалистик милекте шәхси байығыу һәм комһоҙлоҡ маҡсатында файҙаланырға бер кемдең дә хаҡы юҡ.* Башҡорт АССР-ының Конституцияһы, 1984.

**МАҠСУД** [*ғәр.*] *и. иҫк. кит.* Маҡсат. *Донъяла шаҡ булырҙай аҡыллылар вафат булыр, етә алмай бер маҡсудҡа.* М. Ғафури.

**МАҠТАЛЫУ** *к. төш. кар.* **маҡтау.** *Яңылыш маҡталыуҙан һаҡлан, яңылыш маҡталыуы ҡурҡыныс.* Н. Нәжми.

**МАҠТАНСЫҠ** *с.* Үҙен үҙе шәпкә сығарып һөйләгән; ҡупым. *Маҡтансыҡ кеше. Маҡтансыҡ булыу.* ■ *Көслө бул, ләкин булма маҡтансыҡ.* М. Сөндөклө. *[Образда] власть яратыусы, маҡтансыҡ, имеш, бөтә колхозды ул ғына тотоп тора, тип уйлаған бер һауалы кешене күрәбеҙ.* Р. Ниғмәти.

● *Маҡтансыҡ иренен ялар, алдаҡсы артына ҡарар.* Әйтем.

**МАҠТАНЫС** *и.* Маҡтаныу, ғорурланыу тойғоһо уятырлыҡ кеше йәки нәмә. *Салауат Юлаев беҙҙең маҡтаныс.* ■ *Днепр ҡалды, илдең маҡтанысы Днепрогэс көлгә әйләнде.* Ғ. Рамазанов.

**МАҠТАНЫУ** *к.* Үҙеңде, яҡыныңды, үҙ эшеңде йәки нәмәңде шәп итеп күрһәтеү. *Урынһыҙ маҡтаныу. Эшең менән маҡтаныу. Маҡтанып һөйләү.* ■ *[Хафиз бажаһына:] — Һинең дә маҡтанырға хаҡың бар. Шәп эшләй икән, һәр кем үҙ профессияһы менән маҡтанырға .. тейеш.* С. Агиш. *Әтәлге ҡош маҡтанһа, ҡулдән һыҫар типтем, тир; көйгәнәк ҡош маҡтанһа, ярҙан сысҡан типтем, тир* (Ҡобайырҙан). **Ярылып** (*йәки* **ярылырҙай булып**) **маҡтаныу** саманы белмәй, ныҡ маҡтаныу. *Айҙар һүҙен һүҙ итеүе менән ярылырҙай булып маҡтанды.* Һ. Дәүләтшина.

**МАҠТАНЫШЫУ** *к. урт. кар.* **маҡтаныу.**

**МАҠТАТЫУ** *к. йөкм. кар.* **маҡтау.** *Ул үҙен .. бармаҡ башындай баланан да маҡтатҡыһы килә, аҙ ғына маҡтауға ла ҡупая ине.* Т. Хәйбуллин.

**МАҠТАУ** *ҡ.* Кемдең йәки нәмәнең яҡшы яғын хуплап, шапкә сығарыу. *Баланы маҡтау. Маҡтап бөтөрә алмау. Маҡтауға лайыҡ кеше. Маҡтау һүҙе.* ■ *Бына беҙ бөгөн бында килеп сыҡтыҡ. Һин маҡтаған техниканы үҙ файҙабыҙға ектек.* Д. Юлтый. **Йығылып** (*йәки* **үлтереп**) **маҡтау** үтә ныҡ маҡтау. *Юл оҙоно ул үҙенең ауылын, тау-йылғаларын маҡтап барҙы.* Ә. Вахитов.

◆ **Китап маҡтай** берәй эште хуплағанда әйтелә. **Маҡтап килеү** (*йәки* **йөрөү**) ашарға ултырған саҡта ғына килеп ингән кешегә әйтәләр. *[Фатима:] Һай, бик маҡтап киләһегеҙ икән, яңы ғына табынға ултырышып тора инек!* В. Бикбай. **Маҡтау ҡағыҙы** *ҡар.* **ҡағыҙ.**

● *Аҡыллы атын маҡтар, ярты аҡыл ҡатынын маҡтар.* Әйтем. *Атты айһыҙ маҡтама, киленде йылһыҙ маҡтама.* Мәҡәл.

**МАҠТАУЛЫ** *с.* Маҡтауға лайыҡ, маҡтап йөрөтөлгән. *Маҡтаулы һауынсы. Маҡтаулы эш.* ■ *Бөгөндән башлап, мин эшсе-крәҫтиән Ҡыҙыл Армияһының маҡтаулы командиры.* Н. Ҡәрип. / *кәмһ.* Маҡтап йөрөтөлгән кем йәки нимәнеңдер бер насар яғы килеп сыҡҡанда әйтелә. *Маҡтаулы Асия үҙен танытты: больницаға килһә, илауҙан башҡаны белмәй.* Д. Исламов.

◆ **Маҡтаулы исем** эштәге юғары ҡаҙаныш өсөн бирелгән рәсми атама. *Маҡтаулы исем биреү.*

● *Ил эшенең иртәгеһе маҡтаулы.* Мәҡәл.

**МАҠТАШЫУ** *ҡ. урт. ҡар.* **маҡтау.** *[Зия:] Әле маҡташырға иртә. Эште яңы башлап торабыҙ.* Х. Зарипов.

**МАҠЫМ** *с. диал.* Аңһыҙ, алйот.

**МАЛ** *и.* **1.** Тормош кәрәге өсөн йортта аҫралған хайуан. *Ваҡ мал. Екке мал. Тоҡомло мал. Һауын мал. Йорт малы. Йылҡы малы. Өйөр малы. Һуғым малы. Һыйыр малы. Мал өйө. Мал көтөү. Мал ҡарау. Мал үрсетеү.* ■ *Ҡапҡа шығыр итеп асылыуға, һанап һанына сыға алмаҫлыҡ мал бер-бер артлы мәкегә ҡарай ағыла башланы.* Т. Хәйбуллин. *[Ҡуҙыйкүрпәс] төш ваҡыты етерҙән алда, ҡулына ҡороҡ тотоп, малдар һыулауға төшә торған йомро юл буйына йәшенеп ятты, ти.* «Ҡуҙыйкүрпәс менән Маянһылыу». *Ишегем алды һары һалам, һепереп малдарға һалам* (Халыҡ йырынан). **Аяҡлы мал** тере мал. *Ул [Ҡуҙыйкүрпәс] Маянһылыуҙы ғына түгел, бөтә байлығыңды талап, барлыҡ аяҡлы малыңды ҡыуып алып китеүе бар.* «Ҡуҙыйкүрпәс менән Маянһылыу». **Мал ҡото** йортҡа, малға бәрәкәт килтерә, тип иҫәпләнгән тоҡомло мал. *Һолло ла атым, мал ҡотом, ти, Аҡһаҡ та ҡолам янда юҡ.* «Аҡһаҡ ҡола». **Мал әйтеү** төшкән киленгә мал атау.

**2.** Тормош-көнкүрештә ҡиммәте булған бөтә нәмә; мөлкәт, байлыҡ. *Донъя малы. Ҡулға мал төшөрөү. Мал бүлеү. Мал йыйыу.* ■ *[Бәшәргол — Ялайға:] Өлкәман серегән бай, һине, һинең кеүек башҡорттарҙы ҡан илатып, балаңдың аҡтыҡҡы һыныған ауыҙынан тартып алып, мал йыйған бай.* Ш. Насыров. *Ҡайғырмайыҡ, дуҫтар, юҡ мал өсөн, баш һау булһа, малдар табыла* (Халыҡ йырынан). **Ата малы** атанан балаға ҡалған мөлкәт. *Һыҡмыр, йән һүйгыс бер кеше булмаһа, [Гәрәй] күптән ата малын ослап, ҡаҡ һикегә ҡалған булыр ине.* Б. Бикбай. **Ҡалын малы** ҡалынға бирә торған мөлкәт. *Ҡыҙ кемгә бармаҫ ине, егет кемде алмаҫ ине ҡалын малы булмаһа* (Халыҡ йырынан). **Мал ҡаҙаһы** малға, байлыҡҡа килгән ҡаҙа. **Хәләл мал** үҙ көсөң менән тапҡан мал-мөлкәт. *[Ҡотлобай:] Был малдарҙа кеше хаҡы юҡ. Барыһы ла коммуналарҙыҡы. Шикләнмәгеҙ, хәләл мал.* Һ. Дәүләтшина.

◆ **Ҡыҙыл мал** метрлы тауар. *Зариф бай ҡыҙыл мал менән һатыу итә ине. Бик бай кеше ине.* Ғ. Ғүмәр. **Мал булыу** ауырыуҙан һуң имен-һау, тере ҡалыу. *«Ул мал булмаҫ, мин уны һуйырмын»,— тине прасол.* Б. Бикбай. **Мал теле** итләс һабаҡлы, сәнскеле ҡалын япраҡлы сүл үҫемлеге; кактус.

● *Ашаған менән мал бөтмәҫ.* Әйтем. *Бай — малын, ярлы моңон һөйләр.* Әйтем. *Ҡарамағандың ҡатыны ташлар, баҡмағандың малы ташлар.* Әйтем. *Ҡымыҙ ҡылыҡ арттырыр, юҡ малыңды таптырыр.* Әйтем. *Көтөү ташлаған малды бүре алыр, ил ташлаған ирҙе гүр алыр.* Әйтем. *Мал ҡаҙаһы — баш ҡаҙаһы түгел: мал табыла, баш табылмай.* Әйтем. *Мал эйәһенә оҡшай.* Әйтем. *Уртаҡ малды эт тә еймәҫ.* Мәҡәл.

**МАЛАДИС** [*рус.* молодец] *ымл. һөйл.* Маҡтау, хуплау һүҙе. *[Партизан:] Маладис, беҙгә ныҡ ярҙам иттегеҙ.* Ш. Насыров.

**МАЛАЙ** *и.* **1.** Кесе йәштәге ир бала. *Бәләкәй малай. Ваҡ малайҙар. Иптәш малай. // Малай кеше. Малай саҡ.* ■ *Малай бара. Ҡайҙа бара, тоҡсай аҫып арҡаһына? Белмәй ине ҡағылырын ниндәй яҙмыш ҡапҡаһына.* М. Кәрим.— *Ошо йолҡош малайға алма кеүек ҡыҙҙы әрәм итергә яраймы!* (Әкиәттән). **Маңҡа малай** 1) бик бәләкәй малай; 2) *ҡусм.* ҡулынан эш килмәгән үҫмер.

**2.** Атай-әсәйҙең ир затынан булған балаһы. *Малай табыу.* ■ *Улар янына илаҡ балаһын йоҡлата алмай аптырап бөткән Хәлимә лә, малайын ҡулына алып, имеҙә-имеҙә килеп ултырҙы.* Һ. Дәүләтшина. *Атаһы Быжырмәргәнгә уҡ юнып биргән, малайы шул уғы менән ҡош атып йөрөгән, ти* (Әкиәттән). ◆ **Атайың малайы** ир баланы йомшаҡ ҡына итеп әрләгәндә әйтелә.

**3.** *иҫк.* Байға эшләгән ялсы. *Йәй буйы [Йомағолдар] нисәмә малай тотоп эшләтте. Көн дә, төн дә юҡ, бахырҙар арып, арманһыҙ булып йығылалар.* Ғ. Дәүләтшин.

**4.** *ымл. мәғ.* Ныҡ аптырау, һоҡланыу кеүек тойғоно белдерә. *Килеп тороп «Буранбай»ҙы йырлап ебәргәйнем, малай, бабайҙың күҙ йәштәре һаҡалы буйлап тәгәрләне.* Һ. Дәүләтшина. *Комсомолец Афзал доклад һөйләй, оҫта һөйләй, малай, оратор.* С. Ҡудаш. **Суҡа** (*йәки* **шайтан**) **малай** әрләгәндә, асыуланғанда әйтелә. *[Ғариф:] Суҡа малай, шуға ла аҡылы етмәгән.* Б. Бикбай.

**МАЛАЙҘАРСА** *р.* Малайҙарға (1 мәғ.) хас, малайҙар кеүек. *Малайҙарса ҡыланыу.* / *ҡусм.* Тептән уйламай, еңелсә.

**МАЛАЙЛАНЫУ** *ҡ.* Аҡыл менән эш итмәй, еңел ҡыланыу. *[Управляющий — Дубовка:] Мин һинең малайланыуыңды күреү өсөн саҡырмаҡыным, ололарса һөйләшеү өсөн саҡырҙым.* К. Мәргән.

**МАЛАЙЛЫҠ** *и.* **1.** Ир балаларҙың егет йәшенә тиклемге сағы. *Малайлыҡтан сығып, егет булып өлгөрөр-өлгөрмәҫ сағымда мин бер ҡыҙҙы һөйҙөм.* К. Мәргән.

**2.** *иҫк.* Ялсылыҡ. *[Әфтәх ҡарт:] Мин үҙем бик йәш саҡта Мөьмин тигән байҙа малайлыҡта торған кеше.* С. Агиш.

**МАЛАЙ-ҺАЛАЙ** *и. йыйн. ҡар.* **малай-шалай.**

**МАЛАЙ-ШАЛАЙ** *и. йыйн.* Егет йәшенә тиклемге ир балалар.

**МАЛАХАЙ** *и. диал. ҡар.* **бүрек** 2.

**МАЛАХИТ** [*рус.* ⟨ *гр.*] *и.* Биҙәү әйберҙәре эшләү һәм баҡыр алыу өсөн сырье булып торған асыҡ йәшел төҫтәге минерал. *Урал малахиты.* // *Малахит ҡаш. Малахит ҡумта.* ■ *[Ферсман] беҙҙә малахит, родонит һәм йәшмәнең бик күп төрө барлығын иҫбатланы.* М. Хәйҙәров.

**МАЛҒЫУАР** *и. һир.* Аҡса табыу, мал арттырыуҙы маҡсат иткән кеше; байлыҡ артынан ғына ҡыуған кеше.

**МАЛЕСКИН** [*рус.* молескин ⟨ *ингл.*] *и. иҫк.* Ҡалын, беше арзанлы туҡыма. *Күк малескин.* // *Малескин салбар.* ■ *Мине прилавка ситенә, ҡыҙыл бәҙ, кергизин, малескин .. кеүек иң оҫоҙ тауарҙар һатыла торған урынға килтереп ҡуйҙылар.* Ғ. Ғүмәр.

**МАЛИК** [*ғәр.*] *и.* **1.** *иҫк.* Берәй нәмәгә эйә, хужа. *Малик булыу.* ■ *Дәрт әһеле — шағир, булһа үҙенә малик, шиғырҙы мотлаҡ тыйыу уңай булмаҫ.* Аҡмулла.

**2.** (*баш хәреф менән*) Ир-ат исеме.

**МАЛИӘ** [*ғәр.*] *и. иҫк.* Аҡса эше, финансҡа бәйле эш. // *Малиә һалым. Малиә иҫәп.* ■ *Башҡортостан ветеринария эштәренең малиә яғынан йыл һайын арттырып тәьмин ителә барыуы күренә.* «Совет Башҡортостаның ун йылы», 1929.

**МАЛ-ЙӘН** *и. йыйн. ҡар.* **мал-тыуар.** *Ауылдың, мал-йәндең, бала-сағаның хәлдәре оҙаҡлап бер нисәшәр ҡабат һорашылды.* Ғ. Дәүләтшин.

**МАЛ-ҠАРА** *и. йыйын. ҡар.* **мал-тыуар.** *Миҙхәт тороп, тышҡа сыҡты, мал-ҡараға бесән һалды.* Н. Мусин.

**МАЛЛЫ** *с.* **1.** Мал аҫраған, малы булған. *Бөгөн инде ауыл мул тормошло, электрлы, маллы, икмәкле.* Х. Ҡунаҡбай.

**2.** Донъяһы етеш, тормошо мул; бай. *Наҙандар маллы, әммә беҙ белемле, бөтә тиҙ донъя малы.* Ш. Бабич.

● *Көслө менән көрәшмә, маллы менән даулашма.* Мәҡәл.

**МАЛ-МИЛЕК** *и. йыйн. ҡар.* **мал-мөлкәт.**

**МАЛ-МОНАЯТ** *и. йыйн. ҡар.* **мал-мөлкәт.**

**МАЛ-МӨЛКӘТ** *и. йыйн.* Йорт-хужалыҡтағы бөтә булған нәмә; матди байлыҡ. *[Кулактар] мал-мөлкәтен һаҡлап ҡалыр өсөн беҙҙең иптәштәрҙе үлтерҙе.* Б. Хәсән.

**МАЛПӘРӘСТ** [*фарс.*] *и. иҫк.* Мал йыйырға яратыусы.

**МАЛСЫ** *и.* **1.** Малсылыҡ эшендә эшләгән кеше; мал ҡараусы. *Совхоз малсылары.* ■ *.. Малсыларға көндәлек практик ярҙам күрһәтергә, етештереүсәнле хеҙмәт өсөн бөтә шарттар тыуҙырырға кәрәк.* «Совет Башҡортостаны», 1987, 24 сентябрь.

**2.** Малсылыҡ белгесе.

**МАЛСЫЛЫҠ** *и.* Ауыл хужалығының мал аҫрай торған тармағы. *Малсылыҡ бригадаһы. Малсылыҡ фермаһы. Малсылыҡ продукцияһы.* ■ *Правление ултырышы малсылыҡты үҫтереү планы .. тураһында Әхнәфтең докладын тыңланы.* Д. Исламов. *Малсылыҡ өсөн ныҡлы аҙыҡ базаһы булдырыу .. иң мөһим бурыстарҙың береһе.* «Совет Башҡортостаны», 1986, 25 май.

**МАЛ-ТЫУАР** *и. йыйн.* Хужалыҡта аҫралған бөтә тереклек. *Мал-тыуар аҫрау. Мал-тыуар тотоу.* ■ *Яңғыҙ ҡарсыҡ бик мул йәшәй, еләк-емеш баҡсаһы ла бар, аҙбары тулы мал-тыуар.* Т. Арслан. *Былар [әбей менән бабай] бик ауырлыҡ менән, интегеп көн күргән, мал-тыуары ла, ҡош-ҡорто ла булмаған, ти* (Әкиәттән).

**МАЛҺАҠ** *с. һөйл.* Мал һөйөүсән. *Малһаҡ кеше.*

**МАЛҺЫҘ** *с.* Мал-мөлкәте, байлығы булмаған; ярлы. *Ир баҫмаған ер буламы? Атһыҙ егет ир буламы? Малһыҙ егет, һанһыҙ егет хан ҡыҙына тиң буламы?* «Алпамыша».

**МАЛЬТУЗИАНСЫЛЫҠ** *и.* Хеҙмәтсәндәрҙең ауыр тормошта йәшәүенең сәбәбе халыҡтың кәрәгенән артыҡ үрсеүенән генә тип аңлатҡан буржуаз теория.

**МАЛЯ́Р** [*рус.*] *и. ҡар.* **буяусы.**

**МА́МОНТ** [*рус.*] *и.* Филдәр ғаиләһенә ҡараған, хәҙер бөткән, йөнтәҫ йөнлө бик эре хайуан. *Мамонт теше. Мамонт һөлдәһе.*

**МАМЫҠ** *и.* **1.** Тырнаҡ үлән һымаҡтар ғаиләһенә ҡараған көньяҡта үҫә торған бер йыллыҡ үҫемлек (сүс алыу өсөн үҫтерелә). *Мамыҡ үләне. Мамыҡ орлоғо. Мамыҡ майы.* ■ *Мамыҡ сәскәһе бер генә көн тора. Ҡойолған сәскәләр урынына, мәк башы һымаҡ, сәтләүек ҙурлығында йәшел түбырсыҡ барлыҡҡа килә.* Я. Вәлиев.

**2.** Шул үҫемлектең еп, целлюлоза һ. б. әҙерләү өсөн ҡулланылған орлоҡ сүсе. *Мамыҡ йыйыу. Дәүләткә мамыҡ тапшырыу.* / Шул сүстең махсус рәүештә эшкәртелгән үтә нәфис, ҡабарып торған йомшаҡ массаһы (медицинала һ. б. урындарҙа ҡулланыла). *Йәрәхәтте йодлы мамыҡ менән һөртөү.* **Аҡ мамыҡ** таҙартылған мамыҡ. **Ҡара мамыҡ** таҙартылмаған мамыҡ. / *с. мәғ.* Шул сүстән эшләнгән йәки шул сүс ҡушылған, һалынған. *Мамыҡ еп, Мамыҡ туҡыма. Мамыҡ һалып һырылған юрған.* ■ *Бал ҡорттарын ҡарағанда аҡ халат йәки мамыҡ туҡыманан тегелгән кейемдә эшләргә кәрәк.* «Совет Башҡортостаны», 1986, 10 июнь.

**3.** Төрлө үҫемлектең орлоғондағы йөнтәҫләнеп торған йомшаҡ төктәр. *Мамыҡ осора тирәктәр — ауылым тирәктәре.* Ә. Таһирова.

**4.** Ҡош-ҡорт һәм хайуандың йомшаҡ йөнө. *Ҡаҙ мамығы. Ҡуян мамығы.* ■ *Иҙәнгә күп ҡуйҙың көҙәменән баҫылған ап-аҡ кейеҙ йәйелеп, стена буйҙарына матур һүҙмалар һалынып, өҫтөнә яңы ғына ҡаҙ мамығынан яһалған ап-аҡ күпсектәр ҡуйылған.* Ғ. Дәүләтшин. / *с. мәғ.* Шул йөндән эшләнгән. *Мамыҡ мендәр. Мамыҡ яҫтыҡ. Мамыҡ шәл.*

**5.** *диал.* Дебет. *Мамыҡтан шәл бәйләү.*

◆ **Быяла мамыҡ** *ҡар.* **быяла.**

**МАМЫҠБАШ** *и.* Ҡурән һымаҡтар төркөмөнә ҡараған йөнтәҫ орлоҡло һаҙ үләне.

**МАМЫҠЛАНДЫРЫУ** *к.* **1.** Мамыҡ кеүек итеп йомшартыу; йомшаҡ итеү. *Сусте мамыҡландырыу.*

**2.** Мамығын сығарып ҡабартыу; йөнтәçләндереү. *Шәлде мамыҡландырыу.*

**МАМЫҠЛАНЫУ** *к.* **1.** Мамыҡҡа (1, 3 мәғ.) ултырыу, мамыҡ сығарыу.

**2.** Мамығы сығып, ҡабарыу; йөнтәçләнеү. *Шәл мамыҡланып, күпереп китте.*

**МАМЫҠСЫ** *и.* Мамыҡ (1 мәғ.) үçтереү, мамыҡсылыҡ менән шөғөлләнгән кеше. *Мамыҡсылар бригадаһы.*

**МАМЫҠСЫЛЫҠ** *и.* Ауыл хужалығының мамыҡ үçтереү менән шөғөлләнгән тармағы. *Мамыҡсылыҡ совхозы.*

**МАМЫРАУ** *к. диал.* Иҙрәп тирләү.

**МАМЫРЛАУ** *к. диал.* Саҡ атлау (аяҡ ауыртҡанлыҡтан).

**МАН** *и. иçк.* Тау.

**МАНАП** *и. иçк.* Эре ер, мал биләүсе; алпауыт.

**МАНАРА** [*ғәр.*] *и.* **1.** Мәсеттең аҙан әйтә торған өçкө бейек ҡоролмаһы. *Ике манаралы мәсет.* ■ *Ауылдың уртаһындараҡ урынлашҡан оҙон манаралы, ваҡ ҡына тәҙрәле мәсетте былтыр ғына клубҡа әйләндереп, ишегенең башына һәм манараһы осона ҡыҙыл флаг элделәр.* Н. Ҡәрип.

**2.** Тар ғына итеп эшләнгән бейек ҡоролма; башня. *Сиркәү манараһы.*

**3.** *этн.* Сигелгән биҙәктең бер төрө. *Башҡорт ҡыҙҙары сигеүҙең бер төрлөһөн манара, бер төрлөһөн тәкә мөгөҙө тип йөрөтәләр.* М. Һаҙиев.

**МАНАРАЛАУ** *к.* **1.** Мәсеткә йәки башҡа бинаға манара ҡуйыу.

**2.** Манара (3 мәғ.) төшөрөп сигеү.

**МА́НГО** [*рус.* ‹ *фр.*] *и.* **1.** Тропик урмандарҙа үçә торған мәңге йәшел емеш ағасы.

**2.** Шул ағастың һарғылт йәшел төçтәге хуш еçле татлы емеше. *Манго һуты.*

**МАНДАРА** *и.* Ҡәбер ҡаҙа торған ҙур салыр (башына һуҡа тимере йәки башҡа үткер тимер ҡуйып эшләнгән). *Мандара менән ер ҡаҙыу.*

**МАНДАРИ́Н**[1] [*рус.* ‹ *порт.*] *и.* Иçке феодаль Ҡытайҙағы ҙур түрәләрҙең европаса атамаһы.

**МАНДАРИ́Н**[2] [*рус.* ‹ *исп.*] *и.* **1.** Йылы яҡта үçә торған мәңге йәшел цитрус ағасы. *Мандарин сәскәһе.*

**2.** Шул ағастың ҡыҙғылт һары төçтәге һутлы емеше. *Мандарин һуты.*

**МАНДА́Т** [*рус.* ‹ *лат.*] *и.* Нимәгәлер вәкиллеккә раçлаған рәсми ҡағыҙ. *Депутат мандаты.* ■ *[Ғәлиев — Булатҡа:] Һиңә бөгөн үк Баҡра ауылына барырға кәрәк. Волком вәкиле булғанлығыңа мин мандат бирермен.* Ә. Вәли.

◆ **Мандат комиссияһы** съезд, конференцияларҙа һәм халыҡ депутаттары Советы сессияһында ҡатнашыусыларҙың вәкиллек хоҡуғын тикшереү өсөн һайлап ҡуйылған комиссия.

**МАНДОЛИН** [*рус.* мандолина] *и. кар.* **мандолина.**

**МАНДОЛИ́НА** [*рус.* ‹ *ит.*] *и.* Оҙонса түңәрәк ағас корпуслы, ғәҙәттә дүрт пар ҡыллы, сиртеп уйнай торған музыка ҡоралы. *Көйләнмәгән мандолина. Мандолина ҡылы. Мандолина уйнау.* ■ *Ул [Зилә] мандолинаһына эйелә биреп, көйләп, уйнап ҡараны.* К. Кинйәбулатова. *Ебәктәй нескә генә мандолина ҡылдары, земберләтеп сиртһәң уға, һибелә .. моңдары.* А. Игебаев.

**МАНДОЛИНАСЫ** *и.* Мандолина уйнай белгән кеше.

**МАНДЫРЫУ** *к. йөкм. кар.* **маныу** 3. *Зәңгәргә мандырыу.*

**МАНДЫУ 1.** Ныҡлап һауығыу, сирҙән ҡотолоп, аяҡҡа баçыу, шәбәйеү. *Ул [Закир] больницала ятып, төҙәлә алмаған .. Бынан һуң мандый алмаç инде.* М. Ғафури.

**2.** *кусм.* Тормошо яҡшырып хәлләнеү. *Хәкимдең ата-әсәһе мандыманы, байлыҡтары бер тукал кәзәнән артманы.* Я. Хамматов.

**3.** Берәй нәмәнең рәхәтен, файҙаһын күреү; уңыу, йәлсеү. *[Мәстүрә — Йәнтимергә:] — Ә һин үҙеңде үҙең һынайһы бар әле. Холкоңдо ташламаһаң, барыбер мандый алмаçһың.* Я. Вәлиев.

● *Ашыҡҡан ҡыҙ иргә барһа ла мандымаç.* Әйтем.

**МАНДЫШ** *и.* **1.** Һыулы урында үçкән ҡарағай.

**2.** *диал.* Бешә.

**МАНЁВР** [*рус.* ‹ *фр.*] **1.** *хәрб.* Ғәскәр һәм флоттың дошманға һөжүм итеү өсөн һуғыш ҡырында яһаған хәрәкәте. *Манёвр яһау.* ■ *Башҡорт атлы дивизияһы ла ҡатмарлы манёвр яһап, дошманды ҡыуа-ҡыуа, алға бара ине.* К. Мәргән. / Ғәскәр йәки флоттың һуғыш хәленә яҡынайтылған шарттағы тактик уйыны. *Киев ҡалаһында үткәрелгән манёврҙа тактиканы уставса оçта үтәгәне өсөн Рәүф Дәүләтов грамота алды.* С. Кулибай.

**2.** *т. юл* Состав төҙөгән локомативтарҙың һәм вагондарҙың станциялағы йөрөшө. *Манёвр паровозы. Манёвр яһау.*

**3.** Хәрәкәт йүнәлешенең үҙгәреше (карап, самолетҡа ҡарата).

**МАНЁВРЛЫ** *с.* **1.** *хәрби* Манёврҙар (1 мәғ.) ҡулланылған, манёврҙар менән алып барылған. *Манёврлы һуғыш. Манёврлы оборона.*

**2.** Йүнәлеште тиҙ үҙгәртеүгә һәләтле; хәрәкәтсән. *Манёврлы карап.*

**МАНЕ́Ж** [*рус.* ‹ *фр.*] *и.* **1.** Һыбай йөрөү, ат уйнатыу өсөн ҡулайлаштырып эшләнгән ҙур йорт йәки майҙан. *Ҙур манеж. Манеж түңәрәге. Манежда йөрөү. Манежда уйнау.*

**2.** Цирк майҙаны. *Манежға клоундар сыҡты.*

**МАНЕКЁН** [*рус.* ‹ *фр.*] *и.* Кейемде магазин күргәҙмәһенә ҡуйыу өсөн хеҙмәт иткән кеше ҙурлығындағы ҡурсаҡ. / Кейҙереп ҡарап тегеү өсөн яһалған кейем ҡалыбы.

**МАНЕКЕНСЫ** *и.* Тегелгән әҙер кейемде өçтөнә кейеп халыҡҡа күрһәткән кеше. *Манекенсы ҡыҙ. Манекенсы булып эшләү.*

**МАНЕ́РА** [*рус.* ‹ *фр.*] *и.* **1.** Кешенең үҙен тотоу рәүеше, ҡылығы. *М. М. Шайморатовтың хәрәкәт манераһында һәм үҙен тотоуында һис бер артыҡлыҡ, кәрәкмәгән ҡыланыштар юҡ.* С. Әлибаев.

**2.** Ижади эштә айырым авторҙарға, башҡарыусыларға хас алымдар йыйылмаһы. *Яҙыу манераһы ни тиклем «еңелсәрәк» булһа, көлкөлө әçәрҙәрҙә йөкмәтке шул тиклем тәрәнерәк була.* К. Әхмәтйәнов.

**МАНЖЕТ** [*рус.* ⟨ *фр.*] *и.* **1.** Күлдәктең еңе осондағы беләҙек. *Киң манжет. Тар манжет.*

**2.** *тех.* Ике торба тоташҡан ерҙән һыу, һауа үтмәһен өсөн йәки ике торбаның башын тоташтырыу өсөн ҡуйыла торған балдаҡ.

**МАНЗАРА** [*гәр.*] *и. иҫк.* **1.** Күҙ алдындағы күренеш, тәбиғәт күренеше. *Тәбиғәттең ошо манзараһын мең йәннәттән артыҡ күрәмен.* М. Фәйзи. *Бөтөрөлә, шартлай йәшендәр, ялтырап, юл-юлланып! Ел-дауыл үкерә.. Илаһи ҡурҡыныс бер манзара.* С. Ҡудаш.

**2.** Тәбиғәт күренешен сағылдырған һүрәт; пейзаж.

**МАНЗУМ** [*гәр.*] *с. иҫк. кит.* Теҙмәле, шиғри. ♦ **Манзум булыу** нәфис, матур булыу. *Сығыр унан кейем-һалым, ситек-башмаҡ булып манзум.* Ғ. Соҡорой.

**МАНЗУМА** [*гәр.*] *и. иҫк. кит.* Шиғыр, шиғри әҫәр.

**МАНИҒ** [*гәр.*] *и. иҫк. кит.* Ҡаршылыҡ, тотҡарлыҡ, кәртә. *Ҡара бәхетем ҡараңғы төндән яман. Юлымда мең төрлө сәд, маниғ һаман.* Б. Мирзанов.

□ **Маниғ булыу** ҡаршы булыу. *Ситкә китеүҙе ағайға ла әйтмәҫкә уйланым. Сөнки уның да был эшкә ҡаршы төшөүе, сит ергә китеүемә маниғ булыуы мәғлүм ине.* М. Ғафури. **Маниғ ҡылыу** кәртә ҡуйыу, тыйыу. *Табыш итер һунарыбыҙ, .. һатыуҙарыбыҙ маниғ ҡылынды.* Ғ. Ибраһимов.

**МАНИКЮ́Р** [*рус.* ⟨ *фр.*] *и.* Ҡул тырнаҡтарын таҙартып, лак һалыу эше. *Маникюр ҡайсыһы. Маникюр яһатыу.*

**МАНИКЮРСЫ** *и.* Маникюр яһаусы.

**МАНИО́КА** [*рус.* ⟨ *исп.*] *и.* **1.** Һөтләгәндәр ғаиләһенә ҡараған мәңге йәшел тропик ҡыуаҡ (тамырында ашарға яраҡлы йоморсаһы була).

**2.** Ошо үҫемлек тамырынан алынған он.

**МАНИПУЛЯ́ЦИЯ** [*рус.* ⟨ *фр.*] *и.* Ғәҙәттә ҡул менән башҡарыла торған хеҙмәттәге ҡатмарлы эш алымы. *Манипуляция яһау.*

**МАНИР** [*рус.* манерный] *с.* Эре асыҡ биҙәкле. *Сын сынаяҡ сыңлатып, манир биҙәк уйнатып, .. сәйҙәр эсеп ултырам.* К. Кинйәбулатова.

**МАНИРЛАУ** *к. диал.* Биҙәк төшөрөү.

**МАНИРЛЫ** *с. һөйл.* Асыҡ биҙәкле. *Манирлы яулыҡ.*

**МАНИФЕ́СТ** [*рус.* ⟨ *лат.*] *и.* **1.** Юғары властың ҙур ваҡиға айҡанлы халыҡҡа яһаған яҙма мөрәжәғәте. *Крәҫтиәндәрҙе азат итеү тураһындағы манифест.*

**2.** Политик партия йәки йәмғиәт ойошмаларының программа рәүешендәге яҙма мөрәжәғәте. *Коммунистар партияһының манифесы.*

**3.** Яҙыусылар йәки художниктар төркөмө тарафынан яҙма рәүештә билдәләнгән ижад принциптары. *Футуристар манифесы.*

**МАНИФЕСТА́НТ** [*рус.*] *и.* Манифестацияла ҡатнашҡан кеше.

**МАНИФЕСТА́ЦИЯ** [*рус.* ⟨ *лат.*] *и.* Ниндәй ҙә булһа берәй ваҡиғаға ҡарата теләктәшлек йәки ҡаршылыҡ белдереү өсөн урамда ойошторолған күмәк сығыш. *Манифестация яһау. Манифестация үткәреү.* ■ *Ырымбурҙан килгән ҡазаҡтар манифестацияны .. тараталар.* З. Шәрҡи. *Заводтағы власть башлыҡтары .. завод эшселәренең дөйөм манифестацияһын уҙғарырға булды.* Ж. Кейекбаев.

**МАНКРУТ** *и.* Битәрләп, әрләп әйткән һүҙ. *«Ай, әттәгенәһе. Ҡайҙа икән теге бәләкәй сысҡан? Әллә берәй бесәй тотоп ашағанмы ҡәһәр һуҡҡырҙы. Әллә төйләгән тибеп алып киткәнме манкрутты»,— тигән сысҡан батшаһы* (Әкиәттән).

**МАНМА** [1] *и.* Тире ейетеү өсөн әҙерләнгән иҙмә. *Манмала ебетеү. Манмаға һалыу.*

**МАНМА** [2] *р.* Һығып алырлыҡ, манып алған кеүек, лысма. *Хатип менән Хәйҙәр, ҡарға буталып, манма һыу булып, киске сәғәт һигеҙҙә генә ҡайтып инде.* Ф. Иҫәнғолов. **Манма тиргә батыу** (*йәки* **төшөү**) бик ныҡ тирләү. *Урман араһынан биш-алты саҡрым үткәнсе шофер манма тиргә төштө, хәлдән тайҙы.* Я. Вәлиев.

**МА́ННЫЙ** [*рус.*] *и.* Бойҙайҙың үҙәгенән генә яһалған ваҡ ярма. *Манный бутҡаһы. Манный ярмаһы.*

**МАНО́МЕТР** [*рус.* ⟨ *гр.*] *и.* Һауыт эсендәге газ йәки шыйыҡлыҡтың баҫымын үлсәй торған прибор. *Шыйыҡсалы манометр. Пружиналы манометр.* ■ *Газ юлына баҫым регуляторы, манометр һәм һаҡлағыс клапан ҡуйылған.* Р. Низамов.

**МАНСА** *и.* Бал ҡорттарының сәскә һеркәһенән йыйып, кәрәҙгә тултырып, өҫтөнә бал һалып әҙерләгән аҙығы.

**МАНСАБ** [*гәр.*] *и. иҫк.* Вазифалы урын, хеҙмәт урыны. *Ышаныслы кешеләргә тарханлыҡ мансабы бирә башланылар.* Ғ. Ибраһимов.

**МАНСА́РДА** [*рус.* ⟨ *фр.*] *и.* Ҡыйыҡ аҫтында эшләгән бүлмә. *Бөтә художниктар тип әйтерлек төҙөкләндерелгән мансардалар һәм мастерскойҙар менән тәьмин ителгән.* «Совет Башҡортостаны», 1967, 3 февраль.

**МА́НСИ** *и.* РСФСР-ҙың Ханты-Манси автономиялы округында йәшәгән халыҡ һәм шул халыҡтың бер кешеһе (уғыр-фин телдәренең береһендә һөйләшә). *Манси халҡы. Манси ҡатыны. Манси теле.*

**МАНСУБ** [*гәр.*] *с. иҫк.* Мөнәсәбәте булған; мөнәсәбәтле. *Фәнгә мансуб эш.*

**МАНСУР** [*гәр.*] *с. иҫк.* **1.** Өҫтөнлөк алған, еңгән.

**2.** (*баш хәреф менән*) Ир-ат исеме.

**МАНСЫЛЫУ** *к. төш. ҡар.* **мансыу.** *Һыуға мансылыу. Ҡоромға мансылыу.* ■ *Алға нурҙар ҡалҡҡанда тауҙар артынан урмандар, яландар мансыла алтынға.* Р. Ниғмәти.

**МАНСЫУ** *к. ҡар.* **маныу** 1, 2. *[Гөлсәсәк менән Сәғитов] шишмә буйына тукталып, әпкилгән икмәкте һыуға мансып ашап алды.* Й. Солтанов. *Ай ҡалҡты тауҙар артынан, урмандарҙы мансып нурына.* М. Кәрим. *Өҫ-баш ҡором кеүек ҡара ҡатҡан, мансып алған кеүек күмергә.* М. Ғафури.

♦ **[Керпекте] йәшкә мансыу** илау. *Оҙаҡ ҡайтмай тимә, янма, көймә, керпегеңде йәшкә мансыма.* Ш. Бикҡол. **Ҡанға мансыу** кешеләрҙе йыртҡыстарса яҙалау, үлтереү, ҡанға батырыу. *[Нәркәс — Һәүбәнгә:] Атам килеп, яу һалыр, һинең йәнеңде алыр! Токомоңдо бөтөрөр, ҡанға мансыр илеңде.* С. Мифтахов.

**МАНТАША** *и. диал.* Шәре.

**МАНТИК** [*ғәр.*] *и. иҫк. кит.* Фекер итеү закондары һәм формалары хаҡындағы фән; логика. *Шәкерттәр .. мантик уҡытыуҙы бөтөрөп, уның урынына донъя, көнкүреш белемдәрен күберәк уҡытыуҙы талап итә.* Ғ. Ғүмәр.

**МАНТИКИ** [*ғәр.*] *с. иҫк. кит.* Мантикҡа мөнәсәбәтле; логик. *Мантики ҡанундар.* ■ *Ауыл халҡын бер урындан икенсе урынға күсереү саралары ер төҙөү эшенең мантики нәтижәһе һәм дауамы булып тора.* «Совет Башҡортостаның ун йылы», 1929.

**МАНТИКЛЫҠ** *и. иҫк. кит.* Логик бәйләнеш, эҙмә-эҙлелек. *Һүҙҙәремдә бер ҙә мантиклыҡ һаҡланмай торғандыр.* М. Ғафури.

**МАНТИКСЫ** *и. иҫк. кит.* Мантик өлкәһендәге белгес; мантик өйрәткән уҡытыусы. *Мәҙрәсәнең назараты, эштең ҙурға китеүенән ҡурҡып булһа кәрәк, шәкерттәрҙең талаптарының ҡайһы берҙәрен .. үтәне: элһерәп бөткән мантиксы Шәймәрҙән дамолла сығарылып, уның урынына .. Баниев тигән бераү ҡуйылды.* Ғ. Ғүмәр.

**МАНТИКҺЫҘ** *с. иҫк. кит.* Мәғәнә яғынан бәйләнешһеҙ, логикаһы булмаған. *Мантикһыҙ һүҙ.*

**МАНТИКҺЫҘЛАНДЫРЫУ** *ҡ. иҫк. кит.* Мәғәнәләге бәйләнеште юҡҡа сығарыу, мәғәнә яғынан бәйләнешһеҙ итеү. *Бер мәғәнәгә бәйләнгән ике һүҙ араһына икешәр-өсәр тәғәжжеп билдәләре кереп китеп, һүҙҙәрҙе мантикһыҙланды-рып ебәрә.* Д. Юлтый.

**МАНТИКҺЫҘЛАНЫУ** *ҡ. иҫк. кит.* Мәғәнә яғынан бәйләнешһеҙгә әйләнеү; мәғәнә яғынан бәйләнешһеҙ булыу.

**МАНТИССА** [*рус.* ⟨ *лат.*] *и. мат.* Логарифмдың кәсер өлөшө.

**МАНТИЯ** [*рус.* ⟨ *гр.*] *и.* **1.** Өҫтән кейә торған киң, оҙон кейем; ябынса. *Руханиҙар мантияһы.* ■ *Императрица .. яурынына гәжәйеп мантия һалған.* Ғ. Хөсәйенов.

**2.** *геол.* Ерҙең ҡабығы менән ядроһы араһындағы ҡатлам. *Башҡортостанда ер ҡатламының ҡалынлығы 40-48 километрға етә. Аҫтараҡ, сама менән 500 километр тәрәнлегендә мантия тип аталған ҡатлам ята* К. Тимергазин.

**МАНТО** [*рус.* ⟨ *фр.*] *и.* Йәнлек тиреһенән киң, оҙон итеп тегелгән ҡатын-ҡыҙ туны.

**МАНТЫҒЫУ** [1] (мантыҡ*ғ*) *ҡ. диал.* Ҡабаланыу.

**МАНТЫҒЫУ** [2] (мантыҡ*ғ*) *ҡ. диал.* Сарсау.

**МАНУЛ** [*рус.* ⟨ *монг.*] *и.* Бесәй һымаҡтар ғаиләһенә ҡараған затлы тиреле йыртҡыс йәнлек.

**МАНУСКРИПТ** [*рус.* ⟨ *лат.*] *и. кит.* Боронғо ҡулъяҙма.

**МАНУФАКТУРА** [*рус.* ⟨ *лат.*] *и.* **1.** Капиталистик производствоның ҡул хеҙмәтенә ҡоролған тәүге ябай формаһы.

**2.** *иҫк.* Туҡыу фабрикаһы.

**3.** *иҫк.* Туҡыма, тауар. *Мануфактура магазины.*

**МАНЫЛЫУ** *ҡ. төш. ҡар.* **маныу** 1—3. *Буяуға манылыу.*

**МАНЫУ** *ҡ.* **1.** Шыйыҡлыҡҡа сумырыу; мансыу. *Пероны ҡараға маныу.* ■ *[Ямал Сәғиҙәне] балаҫ түшәп яҡкырҙы. Маңлайына һалҡын һыуға манып таҫтамал ҡуйҙы.* М. Тажи. / Шыйыҡлыҡты берәй нәмәгә ныҡ итеп һеңдереү; мансыу. *Майға маныу.* / *ҡусм.* Тотош солғап күмеү, ҡойондороу. *Офоҡто моңһоу ал нурға манып, ҡояш байыны.* Ф. Иҫәнғолов.

**2.** Онтаҡ һымаҡ нәмәгә һалып әүәләү; мансыу. *Алыҫ юлдан киләләр булһа кәрәк, аттарының өҫтөн, онға манып алған һымаҡ, аҡ бәҫ ҡаплаған.* Б. Бикбай.

**3.** Буяулы һыуға һалып, кейем, ҡаралдыға яңы төҫ биреү; буяу. *Алъяпҡысың алһыу-алһыу, алһыуға мандың мәллә* (Халыҡ йырынан). / Нимәнеңдер өҫтөн икенсе төрлө матдә менән йоҡа ғына итеп ҡаплатыу; ялатыу. *Алтынға маныу. Көмөшкә маныу.*

**МАҢ** [1] *и. иҫк.* Кейемдең биленә, ең осона һ. б. урынға ҡыҫып тороу өсөн ҡуйылған эҙеп; бөрмә. *Эй, ҡыҙый, .. минең ыштандың маңын тар иткәнһең, төҙәтеп тегеп ҡуй.* М. Ғафури.

**МАҢ** [2]: **маң булыу** берәй шөғөлгә онотолоп китеп, ныҡ бирелеү. *Эшкә маң булып, апайымдың эргәмә килеп торғанын да һиҙмәгәнмен.* Ш. Бикҡол.

**МАҢ** [3]: **маң булыу** *диал.* дусар булыу. *Киҙәгәс күлдең буйында күп командаға дәл булдым. Үләнде күлдең баштарында тотолорға шунда маң булдым* (Халыҡ йырынан). **Маң баҫмай** бер аҙым артҡа сикмәй. *Улар [ярлылар] тамға йыйған мәлдә лә ауыҙҙарынан ут сәсеп, маң баҫмай, ҡаршы торҙолар.* Т. Хәйбуллин. **Маң юлатмау** яҡын килтермәү; яҡын юлатмау.

**МАҢҒАЙ** *и. диал.* Маңлай.

**МАҢҠА** *и.* **1.** Танауҙан сыҡҡан лайлалы шыйыҡса. / Балалыҡтан сыҡмаған, тәжрибәһеҙ кешегә кәмһетеп әйтелә. // *Маңҡа малай. Маңҡа бала.* ■ *[Сәхипгәрәй:] Элекке заман булһа, мин .. нишләтергә белер инем. Ә хәҙер ошо маңҡаларға ҡаршы бер нәмә лә эшләй алма инде?!* И. Ғиззәтуллин.

**2.** (*йәки* **маңҡа ауырыуы**) Йылҡы малында була торған йоғошло ауырыу.

● *Башты балта боҙор, йылҡыны маңҡа боҙор.* Әйтем.

**МАҢҠАЛАУ** *ҡ. һөйл.* **1.** Маңҡалыға әйләнеү, маңҡалы булыу. *Һыуыҡ тейеп маңҡалап йөрөү.*

**2.** Маңҡаға буяу.

**МАҢЛАЙ** *и.* Баштың күҙҙән, ҡаштан өҫтәге ҡаҡ өлөшө. *Киң маңлай. Тар маңлай. Текә маңлай. Маңлай йыйырсығы. Маңлай сәсе. Маңлайға ҡулды ҡуйып ҡарау.* ■ *Бәҙерғол Салауаттың янып торған күҙҙәренә, киң маңлайына иғтибар итте. Ун туғыҙы тулыр-тулмаҫ егет-елән, ә йөҙөндә, киң күкрәгендә, беләктәрендә күпме көс-ғәйрәт.* Ғ. Хөсәйенов. *Шафиҡ картузын маңлайына батырыбыраҡ кейҙе.* Я. Хамматов. *Салауат менгән тура аттың маңлайында булыр урайы* (Халыҡ йырынан). **Ҡаҡ маңлай** «маңлай» һүҙенең мәғәнәһенә эмоциональ төҫ биреү өсөн әйтелә.

◆ **Күҙе маңлайына менгән** ярһыуҙан күҙ алдында ни барын күрмәй килгән кешегә әйтелә. **Маңлайға яҙған** [*йәки* **яҙмыш**] кешенең башынан үтәһе, кисерәһе хәл; күрәсәк. *Маңлайыңа яҙған хаҡ яҙмышын һыпырып ташлап булмай ҡул менән* (Халыҡ йырынан). **Маңлай ҡаршыһында** нәҡ ҡаршыла, күҙ алдында. *Маңлай ҡар-*

*шыһында ғына эленеп торған сигеүле кыҙыл шаршау, тере нәмә һымак кыбырлап, бер якка шыуышып китте.* З. Биишева. **Маңлай менән ер һепереү** бик нык түбәнселек күрһәтеү; теҙ сүгеү. *[Колтүбә] Бүләр хандың алдына килеп, маңлайы менән ер һепереп, .. һүҙ башланы, ти* (Әкиәттән). **Маңлай суғы** *диал.* 1) *кар.* **суҡ** [2]; 2) кикел, кикел сәсе. **Маңлай тирен түгеү** күп көс һалыу. *Ғүмерем буйы маңлай тирен түгеп йыйған малымды нисек кыҙғанмай алаһығыҙ.* Ш. Шәһәр. **Маңлай яҙыу** йөҙ асылыу, кәйефләнеү. *Якуп иген йыя башлағандан бирле беренсе тапкыр маңлай яҙып көлдө.* Б. Бикбай. **Мейес маңлайы** мейестең алғы өлөшө; алды. *Мейес маңлайына өлкән сокалта яһалған. Унда һәр вакыт самауыр кайнаталар.* Ғ. Дәүләтшин. **Таш маңлай** оятһыҙ кешегә ҡарата әйтелә. *Таш маңлайҙар! Шуны белегеҙ: кан теләмәй беҙҙең илебеҙ.* Ғ. Мәсғүт.

**МАҢЛАЙСА** *и.* **1.** Йүгәндең маңлай өлөшөндәге арҡыры ҡайышы.

**2.** Ҡыҙҙарҙың маңлайға бәйләй торған тәңкәле таҫмаһы. *Маңлайса тағыу.*

**МАҢ-МАҢ: маң-маң баҫыу** олпатлы ҡиәфәттә, һалмаҡ ҡына баҫып атлау.

**МАҢРАЙЫУ** *ҡ. диал.* Миңрәүләнеү.

**МАП-** *киҫ.* **Ма**≠ ижеге менән башланған төп сифат йәки рәүешкә ҡушылып, артыҡлыҡ дәрәжәһен бирә. *Мап-матур.*

**МАРАЗ** [*ғәр.*] *и. иҫк.* Ауырыу, сир. *Ошо дүрт нәмәне күрһәтмә беҙгә донъяла, йә рабби: береһе фәкр, береһе дәин, береһе мараз, береһе зиндан* (Мөнәжәттән).

**МАРАЛ** *и.* Эре тарбаҡ мөгөҙлө себер боланы. *Марал ите. Марал мөгөҙө. Марал үрсетеү.* ■ *Һөйләһә һөйләй бирһен кара таған, ҡушылмаҫ аҡ маралға ҡара ҡабан.* Аҡмулла.

**МАРАМА** *с. диал.* Ығы-зығы.

**МА́РГАНЕЦ** [*рус.* ⟨ *нем.*] *и.* Химик элемент, көмөш төҫөндәге ауыр металл. *Марганец иретмәһе. Марганец рудаһы. Марганец ятҡылығы.*

**МАРГАРИ́Н** [*рус.* ⟨ *фр.*] *и.* Үҫемлек майы, туң май һәм башҡа нәмәләр ҡушып яһаған май. *Маргарин заводы. Маргарин майы.*

**МАРГАРИ́ТКА** [*рус.* ⟨ *гр.*] *и.* Ойошҡан сәскәләләр ғаиләһенә ҡараған ваҡ ҡына аҡ йәки алһыу сәскәле баҡса гөлө.

**МАРҘА** [*фарс.*] *и. иҫк.* **1.** Билдәле хаҡ, баһа. *Батша короломо заманында эштә дөрөҫ марҙа булманы, эшсе көсөн айырым байҙар имде, эшсе көсөн улар урланы.* Б. Вәлит.

**2.** Бер берәмеккә тәғәйенле эш йәки бер нәмә күләме; норма. *Ни бирҙегеҙ ярлы, батрак халкына, нисек бара халыкка һалған марҙағыҙ?* Х. Ғәбитов.

**МАРИ** *и.* Мари АССР-ының төп халҡы һәм шул халыҡтың бер кешеһе (уғыр-фин телдәренең береһендә һөйләшә). *Мари халкы. Мари катыны. Мари теле.*

**МАРИНА́Д** [*рус.* ⟨ *фр.*] *и.* **1.** Әсе һеркәгә төрлө тәмләткес һалып яһалған шыйыҡса.

**2.** Һаҡлау өсөн шул шыйыҡсаға һалып,ябып ҡуйылған емеш, йәшелсә.

**МАРИНАДЛАНЫУ** *ҡ. төш. ҡар.* **маринадлау.** *Маринадланған бәшмәк.*

**МАРИНАДЛАУ** *ҡ.* Һаҡлау өсөн емеште, йәшелсәне маринадҡа һалыу. *Йәшелсә маринадлау.*

**МАРИСА** *р.* **1.** Мари телендә. *Мариса һөйләшеү.*

**2.** Мариҙарға хас рәүештә. *Мариса кейенеү.*

**МАРИХ** [*ғәр.*] (*баш хәреф менән*) *и. иҫк. ҡар.* **Марс** [1] 2.

**МАРИХУА́НА** [*рус.* ⟨ *исп.*] *и.* Һинд тармаһынан алынған наркотик матдә. *Марихуана тартыу.*

**МА́РКА** [1] [*рус.* ⟨ *нем.*] *и.* **1.** Хаҡы күрһәтелгән һүрәтле дүрт мөйөш рәүешендәге ҡағыҙҙан торған почта йәки башҡа йыйымдарҙың түләү билдәһе. *Герблы марка. Почта маркаһы. Марка йәбештереү.*

**2.** Нәмәнең эшләнгән урынын, сифатын һ. б. күрһәткән тамға. *Завод маркаһы. Марка һуғыу.*

**3.** Нәмәнең төрө, сорты, сифаты. *Машинаның маркаһы. Коростоң яңы маркаһы.*

**МА́РКА** [2] [*рус.* ⟨ *нем.*] *и.* ГФР һәм Финляндиялағы аҡса берәмеге.

**МАРКАЛАНЫУ** *ҡ. төш. ҡар.* **маркалау.** *Маркаланған тауар.*

**МАРКАЛАУ** *ҡ.* Нәмәнең эшләнгән урынын, сифатын күрһәткән тамға һуғыу. *Аяҡ кейемдәрен маркалау.*

**МАРКАЛЫ** *с.* **1.** Марка (1, 2 мәғ.) йәбештерелгән, марка һуғылған, маркаһы булған. *Маркалы конверт.*

**2.** Юғары сортлы. *Маркалы корос.*

◆ **Маркалы вино** юғары сортлы виноградтан яһалып, тейешле ваҡытҡаса һаҡланған затлы вино.

**МАРКЁР** [*рус.* ⟨ *фр.*] *и. а. х.* Сәскес машинаның орлоҡ өсөн бураҙна һыҙа торған ҡулайламаһы. *Үҫентеләрҙе ергә дөрөҫ ултыртыу өсөн маркёр менән арҡыры-буй һыҙыҡ һыҙып сығалар.* «Совет Башҡортостаны», 1966, 26 апрель.

**МАРКИЗЕ́Т** [*рус.* ⟨ *фр.*] *и.* Үтә күренмәле йоҡа ебәк йәки кизе туҡыма. *Алһыу маркизет.* // *Маркизет күлдәк. Маркизет яулыҡ.* ■ *Ал батист яулыҡ бәйләйем, зәңгәр маркизет кейгәнем* (Халыҡ йырынан).

**МАРКСИ́ЗМ** [*рус.*] *и.* К. Маркс һәм Ф. Энгельстың тәбиғәт һәм йәмғиәт үҫешенең иң дөйөм закондары, иҙелгән һәм эксплуатацияланған халыҡ массаһының революцияһы, социализмдың еңеүе һәм коммунизмдың төҙөлөшө тураһындағы тәғлимәте. *Марксизм теорияһы.*

**МАРКСИ́ЗМ-ЛЕНИНИ́ЗМ** [*рус.*] *и.* **1.** Маркс-Энгельс-Ленин тәғлимәте; эшсе синыфтың донъяға мөнәсәбәтен билдәләгән философик, экономик һәм социаль-политик ҡараштарҙың ғилми системаһы. *Марксизм-ленинизм нигеҙҙәре.*

**2.** Донъяны танып белеү һәм революцион юл менән үҙгәртеп ҡороу тураһындағы йәмғиәт, тәбиғәт һәм кеше аңы үҫешенең иң мөһим закондары, шулай уҡ эшселәр класының капитализмды ҡолатыу, социализм һәм коммунизм төҙөү өсөн барған көрәш закондары хаҡындағы фән.

**МАРКСИ́СТ** [*рус.*] *и.* Марксизм юлынан барған кеше.

**МАРКСИСТИК** *с.* Марксизмға мөнәсәбәтле, марксизм принциптарына нигеҙле. *Марксистик партия. Марксистик әҙәбиәт.*

**МАРКСИСТИК-ЛЕНИНСЫ** *с.* Марксизм-ленинизмға мөнәсәбәтле, марксизм-ленинизм принциптарын сағылдырған. *Марксистик-ленинсы теория.*

**МА́РЛЯ** [*рус.* 〈 *фр.*] *и.* Ғәҙәттә яраны бәйләү өсөн ҡулланылған һирәк кенә йоҡа аҡ туҡыма. *Яраны марля менән бәйләү. Тәнәтмәне марля аша һөҙөү.*

**МАРС** [1] [*рус.* 〈 *лат.*] (*баш хәреф менән*) *и.* **1.** Боронғо Рим мифологияһында һуғыш аллаһы.

**2.** *астр.* Ҡояш системаһында ҡояштан дүртенсе торған ҡыҙғылт төҫтәге планета.

**МАРС** [2] [*рус.* 〈 *гол.*] *и. диңг.* Горизонтты күҙәтеү һәм елкәндәрҙе ҡуйыу, алыу өсөн ҡарап мачтаһына яһалған бәләкәй майҙансыҡ.

**МАРСЕЛЬЁЗА** [*рус.* 〈 *фр.*] (*баш хәреф менән*) *и.* Боронғо француз йыры, хәҙерге ваҡытта Францияның милли гимны. *Эшселәр менән бергә крәҫтиәндәр ҙә марсельеза йырлап: «Төшһөн батша, алмашынһын иҫке хөкүмәт»,— тигән ҙур плакаттар тотоп, урам буйында йөрөгән.* З. Шәрҡи.

**МАРТ** [*рус.* 〈 *лат.*] *и.* Календарь йылының өсөнсө айы. *Март айы. Март бураны.* ■ *Март башында турғай эсерлек һыу булһа, йыл яҡшы була* (Һынамыштан). *Марттың егерме бишендә һыу ҡатһа, бер аҙналыҡ юлға сыҡ* (Һынамыштан).

**МАРТЕ́Н** [*рус.*]: **мартен мейесе** ҡорос ирет торған махсус мейес. *Мең ярымдан артыҡ градус менән ҡорос ҡайнай бында мартенда.* Ҡ. Даян. **Мартен ҡоросо** мартен мейесендә иретелгән ҡорос. **Мартен цехы** мартен ҡоросо иретә торған цех.

**МАРТЕНСЫ** *и.* Мартен цехындағы эшсе. *Мартенсылар бригадаһы.*

**МАРТЫ́ШКА** [*рус.*] *и.* Тар моронло маймылдар төрөнә ҡараған оҙон ҡойроҡло, ҡыҫҡа томшоҡло ваҡ маймыл. *Мартышка балаһы.*

**МАРҺЫҠ** *и.* Ҡарағайҙың тамыр быуынтығы. *[Бикмырҙа] уты оҙаҡҡа етә тип, ағас төптәре, тамыр быуынтыҡтары әҙерләп ҡуйған. Ундай марһыҡ бер янып алһа, тиҙ генә һүнер тимә.* Ғ. Ибраһимов.

● *Марһыҡтың уты күренмәҫ, төтөнө өҙөлмәҫ.* Әйтем.

**МАРШ** [1] [*рус.* 〈 *фр.*] *и.* **1.** Сафта ритмлы аҙымдар менән атлап йөрөү ысулы. *Марш баҫыу.* ■ *Ҡыҙыл ғәскәрҙәрҙең ҡылысы көнгә ҡаршы ялтырай, марш атлап беҙ үткәндә, бар дошмандар ҡалтырай* (Халыҡ йырынан).

**2.** Ғәскәрҙең бер урындан икенсе урынға йәйәүләп күскән хәрәкәте. *Ике көнлөк марш.* ■ *Дивизия утыҙынсы августа 7-се гвардия кавалерия корпусы составында фронтҡа ҡарай марш башланы.* «Совет Башҡортостаны», 1966, 11 октябрь.

**3.** Сафта атлауға йәтешләнгән ритмлы музыкаль әҫәр. *Матәм маршы. Тантаналы марш.* ■ *Музыка өҙөп-өҙөп марш уйнай, меңләп аяҡ ергә баҫа бергә.* Б. Ишемғол.

**МАРШ** [2] [*рус.* 〈 *фр.*] *ымл.* **1.** Сафта торған кешеләргә атлап китеү өсөн бирелә торған команда.

**2.** *һөйл.* Берәй ергә барырға йәки китергә бойорғанда ҡулланыла. *Марш эшеңә!* / Берәй ергә тиҙ китергә кәрәклекте белдергәндә ҡулланыла. *Әле ҡояш яңы ғына арҡаны йылыта башланы. Ҡояш бөтә донъяны ҡыҙҙырып, ҡар ирен бөтөүгә, ремонтты ла бөтөрәбеҙ, унан баҫыуға марш.* М. Тажи.

**МА́РШАЛ** [*рус.* 〈 *фр.*] *и.* **1.** Ҙур хеҙмәт күрһәткән юғары команда составындағы кешеләргә СССР Верховный Советы Президиумы тарафынан бирелә торған генералдан юғары хәрби дәрәжә һәм шул дәрәжәләге кеше. *Авиация маршалы. Маршал йондоҙо.*

**2.** Ҡайһы бер дәүләттәрҙең армияһындағы иң юғары дәрәжә һәм шул дәрәжәле кеше.

**МАРШАЛЛЫҠ** *и.* Маршал дәрәжәһе, чины. *Маршаллыҡҡа күтәреү.*

**МА́РШЕВЫЙ** [*рус.*] *с. һөйл.* Марштағы.

**МАРШИРО́ВКА** [*рус.*] *и.* Теҙелгән сафтың маршҡа баҫып йөрөшө.

**МАРШИРОВКАЛАУ** *к. һөйл.* Маршҡа баҫып йөрөү.

**МАРШРУ́Т** [*рус.* 〈 *нем.*] *и.* Төп йүнәлеше һәм үтеләсәк урындары алдан билдәләнгән юл. *Автобус маршруты. Туристик маршрут.* ■ *Зыяның көндәлек маршруты мәктәпкә, мәктәптән Ташлыйылғаның ярына тиклем ине.* М. Тажи.

◆ **Маршрут поезы** *т. юл* составы һәм йөгө билдәләнеп, тейешле урынға тиклем үҙгәрешһеҙ бара торған тауар поезы.

**МАРШТАҒЫ** *с.* Запастан алынып, һуғыш ҡырындағы ғәскәрҙе тулыландырыу өсөн оҙатылған (ғәскәри часҡа ҡарата). *Марштағы батальон. Марштағы рота.*

**МАС** [1] [*фарс.*]: **мас булыу** берәй нәмәгә мулығып рәхәтләнеү; кинәнеү. *Ауылдың ҡаҙ-өйрәктәре ҡойолған игенгә мас булып, ҡыҡрайышып йөрөйҙәр.* М. Тажи. *Ҡайҙа ҡарама — ҡымыҙ, буҙа эсәләр, мас булып алғандары бейергә тотона* (Әкиәттән).

**МАС** [2] [*рус.* масть] *һөйл.*: **мас булыу** кем йәки нимәгәлер яраҡлы, һәйбәт тип тапҡанда әйтелә. *[Фәриҙәнең] аты көр генә, һабан тартырға мас булыр.* Ғ. Ғүмәр. **Мас килеү 1)** *ҡар.* **мас булыу.** *[Ғиндиҙең] башында ҡаракүл бүрек, өҫтөндә ҡаласа тегелгән яңы бишмәт.. Бына шундай кеше ауыл ҡыҙҙарына мас килә инде.* Д. Юлтый; 2) кем йәки нимәнелер урынлы, ваҡытлы тип тапҡанда әйтелә. *[Сәхиулла:] Әһә, егеттәр, ҡалай мас киләһегеҙ әле! Беҙгә картер күтәрешер [һегеҙ].* Й. Солтанов.

**МАСДАР** [*ғәр.*] *и. иҫк. грам.* Исем ҡылым.

**МА́СКА** [*рус.* 〈 *фр.*] *и.* **1.** Биткә кейер өсөн кеше йәки йәнлек йөҙөнә оҡшатып яһалған нәмә, битлек. *Маска кейеү.* ■ *Боронғо грек театрҙарында маска кейеп уйнағандар.* М. Мәһәҙиев. *Яңы йыл һине һағынып көттөк, йырҙар өйрәндек, шиғыр ятланыҡ, маска яһаныҡ.* К. Кинйәбулатова. / Кеше танымаһын өсөн битте ҡаплап кейә торған нәмә.

**2.** *махс.* Битте һаҡлау өсөн кейелә торған нәмә; битлек. *Вратарь маскаһы. Противогаз маскаһы.*

/ Ауыҙ, танауҙы ҡаплай торған япма. *Кислород маскаһы. Марлянан маска яһау.*

**3.** Кеше йөҙөнөң йәки хайуан башының скульптур һүрәте. / Үлгән кешенең йөҙөнән алынған гипс күсермә.

**4.** Тирене дауалау өсөн биткә яғылған шифалы крем йәки башҡа төрлө май.

**МАСКАРА́Д** [*рус.* ⟨ *фр.*] *и.* Маска һәм төрлө ҡыҙыҡ кейемдәр кейеп үткәрелә торған байрам кисәһе, бал. *Маскарад костюмы. Маскарад ойоштороу. Маскарадта ҡатнашыу.*

**МАСКИРО́ВКА** [*рус.*] *и.* Маскировкалау, йәшереү өсөн ҡуйылған, эшләнгән нәмәләр.— *Абау, нисек ҡайтырмын инде! — тине Дилара, — һуғыш ваҡытында урамда йөрөү ҡурҡыныс бит. Бөтә ер ҡараңғы — маскировка ла маскировка.* Ғ. Ибраһимов.

**МАСКИРОВКАЛАНЫУ** *ҡ. төш. ҡар.* **маскировкалау.** *Маскировкаланған аэродром.*

**МАСКИРОВКАЛАУ** *ҡ.* Ғәскәрҙе, һуғыш ҡоралдарын күренмәҫлек, беленмәҫлек итеп ҡаплау, йәшереү. *Танктарҙы ергә ҡаҙып ултыртып, маскировкалайҙар.* С. Әлибаев.

**МАСҠАР** *и. иҫк.* Ауыр, ҡатмарлы хәрәкәттәр башҡарыусы; акробат. *Бәйге ҡыҙҙы. Унда көрәшәләр, бында масҡарҙар арҡан буйлайҙар, тегендә баҡанға менәләр* (Әкиәттән).

**МАСО́Н** [*рус.* ⟨ *фр.*] *и.* Масонсылыҡ юлынан барған кеше. *Масондар түңәрәге.*

**МАСОНСЫЛЫҠ** *и.* 18 быуат башында Англияла барлыҡҡа килеп, Европаға, АҠШ-ҡа һәм башҡа илдәргә таралған дини-этик хәрәкәт (кешелек донъяһын татыу һәм берҙәм туғанлыҡ союзына берләштереү маҡсаты менән йәшерен халыҡ-ара ойошма төҙөү бурысы ҡуйған).

**МА́ССА** [*рус.* ⟨ *лат.*] *и.* **1.** *физ.* Есемдәге матдә миҡдарын үлсәй торған дәүмәл; материяның инерция һәм гравитация үҙенсәлектәрен билдәләй торған берәмек. *Масса берәмеге. Есем массаһы.*

**2.** *һир.* Теге йәки был предметты тәшкил иткән матдәнең һаны, күләме һәм шул матдә үҙе. *Һыу массаһы.*

**3.** *һир.* Ҡамыр һымаҡ формаһыҙ матдә; берәй нәмәнең ҡуйы йәки ярым шыйыҡ ҡатышмаһы. *Утлы масса. Магма массаһы.*

**4.** Киң ҡатлам хеҙмәт эйәләре, күмәк халыҡ. *Крәҫтиәндәр массаһы. Эшселәр массаһы.*

♦ **Йәшел масса** яңы сабылған йәш үлән. *Ҡышҡылыҡҡа йәшел масса әҙерләү.*

**МАССА́Ж** [*рус.* ⟨ *фр.*] *и.* Дауалау йәки гигиена маҡсатында тәнде һылау, ышҡыу, ыуыу. һ. б. *Массаж щеткаһы. Массаж яһау. Массаж яһаусы.*

**МАССАЖЛАУ** *ҡ.* Массаж яһау. *Аяҡты массажлау.*

**МАССАЖСЫ** *и.* Массаж яһаусы.

**МАССИ́В** [*рус.* ⟨ *фр.*] *и.* **1.** Төҙөлөшө яғынан бер төрлөрәк булған яҫы түбәле тауҙар теҙмәһе. *Тянь-Шань массивы.*

**2.** Бер төрлө нәмәләрҙән торған, бер иш нәмәләре булған киң урын, ер. *Торф массивы. Урман массивы.* ■ *Урал алды урмандарының иң ҙур массивтары Өфө яйлаһында тупланған.* М. Хисмәтов.

**МАССО́ВКА** [*рус.*] *и. һөйл.* **1.** Революцияға тиклемге Россияла эшселәр үткәргән бәләкәй йәшерен митинг, йыйылыш. *Массовкаға йыйылыу.*

**2.** Тәбиғәттә үткәрелгән күмәк ял.

**3.** Күмәк күренеш (сәхнәлә, фильмда).

**МА́ССОВЫЙ** [*рус.*] *с.* Күмәк кеше ҡатнашлығындағы, күмәктә йәлеп иткән; күмәк, киң. *Массовый героизм. Массовый спорт.* ■ *Динамизмға һәм үҙгәрештәргә бай булған заманыбыҙҙа массовый информация сараларының роле байтаҡ-ҡа арта.* «Совет Башҡортостаны», 1986, 26 февраль.

**МА́СТЕР** [*рус.* ⟨ *ингл.*] *и.* **1.** Берәй өлкәләге эш белгесе; оҫта. *Сәғәт мастеры.*

**2.** Производствоның бер бүлегендәге эшкә етәкселек иткән кеше. *Смена мастеры. Цех мастеры. Мастер ярҙамсыһы.*

**3.** Күренекле спортсмендарға бирелә торған дәрәжә һәм шул дәрәжәләге кеше. *Спорт мастеры.*

**МАСТЕРЛЫҠ** *и.* Мастер (3 мәғ.) булған хәл. *Мастерлыҡ нормаһы.*

**МАСТЕРО́К** [*рус.*] *и.* Төҙөлөш эштәрендә иҙмәне һылай торған ҡалаҡтың бер төрө. *Атайым мастерок тотоп, йорттар һала көн һайын.* Ф. Мөхәмәтйәнов.

**МАСТЕРСКОЙ** [*рус.* мастерская] *и.* **1.** Төрлө ваҡ нәмә эшләй йәки йүнәтә торған бәләкәй предприятие һәм шул предприятие урынлашҡан бина. *Сәғәт мастерскойы. Тегеү мастерскойы.*

**2.** Машина йүнәтә торған промышленность предприятиеһы. *Автомобиль мастерскойы. Тимер юл мастерскойы.*

**3.** Заводтың йәки цехтың бер бүлеге. *Инструменталь мастерской.*

**4.** Художник йәки скульпторҙың эш бүлмәһе.

**МАСТИ́КА** [*рус.* ⟨ *гр.*] *и.* **1.** Йәбештереү һәм төрлө ваҡ нәмә яһау өсөн ҡулланылған ҡуйы матдә.

**2.** Паркет иҙәнде ялтыратыу өсөн балауыҙ ҡушып яһалған матдә.

**3.** Ҡайһы бер ағаста була торған хуш еҫле ыҫмала.

**МАСШТА́Б** [*рус.* ⟨ *нем.*] *и.* **1.** Һыҙма, карта һ. б. шартлы рәүештә алынған оҙонлоҡтоң, дәүмәлдең ошонда сағылдырылған объекттың ысын дәүмәленә ҡарата булған нисбәте. *Арҡыры масштаб. Буй масштаб. Картаның масштабы йөҙ километрға бер сантиметр.*

**2.** *күсм.* Берәй эш-хәлдең күләме, таралышы. *Производство масштабтары киңәйҙе.* ■ *Борисовты рота партия ойошмаһына .. һайланылар. Масштаб бәләкәй булыуға ҡарамаҫтан эш күп.* Б. Дим.

**МАСШТАБЛЫ** *с.* **1.** Масштабы булған, билдәле бер масштабта бирелгән. *Бәләкәй масштаблы карта. Масштаблы линейка.*

**2.** *күсм.* Ҙур күләмле. *Масштаблы эш.* ■ *Тормоштағы һәм илдәге ҙур ваҡиғалар, киң эпик планда масштаблы сағылышты талап итә.* Ғ. Хөсәйенов. *Ғәҙәттә, беҙгә ҙур масштаблы, ҙур фекерле, киң ҡоласлы пьесалар, ҙур яҙмышлы пьесалар кәрәк, тиҙәр.* Н. Нәжми.

**МАСШТАБЛЫЛЫҠ** *и.* Ҙур күләмлелек, ҙурлыҡ. *Поэзияның масштаблылығын ҙур күләм түгел, ә ҙур фекер тыуҙыра.* Ғ. Хөсәйенов.

**МАТ**[1] [*рус.* 〈 *фарс.*] *и.* Шахмат уйынындағы королдең ҡаршы яҡ һөжүменән һаҡлана алмай отолған хәле. *Мат алыу. Мат ҡуйыу.*

♦ **Мат ҡурыу** *иҫк.* үлем ҡурҡынысы һалыу. *Ужар сәсеп, мат ҡурып, Ҡатил батша килгән, ти.* «Урал батыр».

**МАТ**[2] [*рус.* 〈 *ингл.*] *и.* **1.** Гимнастик күнегеүҙәр ваҡытында иҙәнгә йәйә торған түшәк. *Матҡа һикереү.*

**2.** Һаламдан йәки башҡа нәмәнән йомарлап, ҡалын итеп үргән түшәк.

**МАТА** *и. иҫк.* Мамыҡ туҡыма.

**МАТАЛАНЫУ** *к. диал.* Маташыу.

**МАТАЛАУ** *к. кар.* **матау.** *Соҡор төбөндә аяҡтары йыуан арҡан менән маталап ташланған Аҡкола ята ине.* Б. Бикбай.

**МАТАУ** *к.* Хәрәкәтләнмәҫлек итеп аяҡ-ҡулды сырмап бәйләү; маталау. / Ҡасмаһын өсөн аттың теҙгенен тышауына тартып бәйләү. *Арт аяғына ҡараһа: йәштән үҙе буйлаған, ҡыҙҙар менән шаярып, бергә ҡолон бәйләгән, аҫауҙары матаған .. йәйләү тора алдында.* «Аҡбуҙат». / Кешәнләмәһен өсөн аттың башын юғары тартып бәйләү.

♦ **Арбаны матау** тау түбәненә төшкәндә, тәгәрмәсте әйләнмәҫлек итеп бәйләү; тышау һалыу.

**МАТАУЫҠЛЫ** *с. һөйл.* Ҡыйынлыҡ килтергән, яйһыҙ, мәшәҡәтле. *Матауыҡлы эш.* ■ *Көлтәне күкрәк менән ташыу бик матауыҡлы була, берҙән, көлтә ишелә, икенсенән, орлоғо ҡойола.* Т. Морат.

**МАТАШТЫРЫУ** *к.* Белер-белмәҫ көйө нимәнелер эшләп маташыу; ҡыландырыу. *Бер наборщик менән бер печатник тәүге номер газетаны аҙна буйы маташтырҙы.* Б. Бикбай. / *һөйл.* Нимәлер эшләргә тырышыу, нимәгәлер көс һалып ҡарау. *Мандолина уйнарға маташтырыу. Сит телдә маташтырыу.*

**МАТАШЫУ** *к.* **1.** Берәй эш менән мәшғүл булыу; шөғөлләнеү. *Кемдер берәү ҡараңғы төндә егелгән ат янында аты менән маташа.* Т. Хәйбуллин. / Әҙ-мәҙ, ара-тирә шөғөлләнеү. *Тарих уҡытыуҙан башҡа һөнәрем юҡ тип әйтер инем, әҙерәк фото менән маташҡан булам шунда.* М. Тажи.

**2.** Берәй эш менән кәрәкмәгәнгә артыҡ булышыу, аҙапланыу. *[Ғәзимә:] Бауырһаҡты үҙем ҡырҡмаһам булмаҫ, бик оҙаҡ маташаһығыҙ.* Һ. Дәүләтшина.

**3.** *≠***ырға** / *≠***ергә** формаһындағы уртаҡ ҡылым һәм *≠*п формаһындағы хәл ҡылымға ҡушылып, ярҙамлыҡ ҡылым сифатында берәй нәмәне эшләргә тырышыуҙы йәки тырышлыҡ һалыуҙы белдерә. *Уҡырға маташыу. Йырларға маташыу. Яҙып маташыу. Бейеп маташыу. Гармунда уйнап маташыу.* ■ *Сәруиҙең ҡараңғыла һәрмәнеп, лампаны яңынан яндырырға маташыуы барып сыҡманы.* М. Ғафури. *Ҡыҫҡырмасы, кәкүк, ай һаташып, хәсрәт арттырырға маташып* (Халыҡ йырынан).

● *Атың юғалһа, йүгәнен эҙләп маташма.* Әйтем.

**МАТБАҒА** [*ғәр.*] *и. иҫк.* Китап, газета баҫа торған урын; типография.

**МАТБУҒАТ** [*ғәр.*] *и.* Ташҡа баҫылып сыҡҡан әҙәбиәт, гәҙәттә ваҡытлы матбуғатҡа ҡарата әйтелә. *Матбуғат алдырыу. Матбуғат таратыу. Матбуғатта сығыш яһау. Сит ил матбуғаты.* ■ *Башҡорт АССР-ы граждандарына .. йыйылыштарҙа, матбуғатта, телевидение, радио аша агитация алып барыу хоҡуғы гарантиялана.* Башҡорт АССР-ының Конституцияһы, 1984. **Ваҡытлы матбуғат** матбуғатта билдәле бер ваҡыт араһында сығып торған баҫмалар (газета, журнал һ. б.).

♦ **Матбуғат конференцияһы** фән, дәүләт һәм башҡа өлкәләге эшмәкәрҙәрҙең матбуғат өсөн үткәргән әңгәмәһе.

**МАТДИ** [*ғәр.*] *с.* **1.** Мөлкәткә, аҡсаға бәйле булған; материаль (2 мәғ.) *Матди байлыҡ. Матди хәл. Матди ярҙам. Матди бәйлелек.*

**2.** Кеше аңынан тыш була торған; материаль (1 мәғ.). *Матди донъя.*

**МАТДӘ** [*ғәр.*] *и.* **1.** Материяның үҙенсәлекле асылы; физик есемде тәшкил иткән нәмә. *Минераль матдә. Органик матдә. Химик матдә.* ■ *Талпандың тәнгә ҡаҙалыуы һиҙелмәй, сөнки ул ҡаҙалыр алдынан ауырттырмай торған матдә бүлеп сығара.* «Совет Башҡортостаны», 1986, 25 май.

**2.** *иҫк. филос. кар.* **материя** 1.

**3.** *иҫк.* Берәй яҙманың бүлеге; параграф, пункт.

♦ **Матдәләр алмашыныуы** тере күҙәнәктәрҙең үҫеше, тирә-йүн менән бәйләнешен тәьмин иткән энергия һәм химик үҙгәрештәр процесы.

**МАТЕМА́ТИК** [*рус.*] *и.* Математика буйынса белгес. / *һөйл.* Математика уҡытыусыһы.

**МАТЕМАТИ́К** *с.* Математикаға мөнәсәбәтле. *Математик формула.*

**МАТЕМА́ТИКА** [*рус.* 〈 *гр.*] *и.* Ысынбарлыҡтағы һанлы дәүмәлдәр араһындағы мөнәсәбәттәр һәм арауыҡтағы формаларҙы өйрәнә торған фән. *Элементар математика. Юғары математика.*

**МАТЕРИА́Л** [*рус.* 〈 *лат.*] *и.* **1.** Берәй маҡсатҡа файҙаланыла торған төрлө матдә, сырье һ. б. *Төҙөү материалы. Синтетик материалдар. Яғыулыҡ материалы.*

**2.** Берәй мәсьәләне өйрәнеү өсөн нигеҙ булып хеҙмәт иткән сығанаҡ; мәғлүмәт. *Фольклор материалы.* ■ *[Сәғиҙә:] Мин был диаграммаларҙы дәрестә күрһәтмә материалдар итеп файҙаланам.* М. Тажи. *Архив материалдарына ҡарағанда, Маркстың «Капиталы» Өфөлә 1880—1882 йылдарҙа күренә башлай.* «Совет Башҡортостаны», 1965, 2 ноябрь. / Берәй эш буйынса тупланған мәғлүмәт; дәлил. *[Нуркин:] Һин шул Юлбарисовтың эшен тикшер әле.. Урлауы дөрөҫ булһа, материалды прокуратураға тапшырырға кәрәк.* Ғ. Ғүмәр.

**3.** Туҡыма, тауар. *Пальтолыҡ материал.* ■ *Һуңғы ваҡытта фирма лавсан, нитрон һәм башҡа синтетик материалдан төрлө кейемдәр тегә башланы.* Ә. Таһирова.

**МАТЕРИАЛИ́ЗМ** [*рус.* 〈 *фр.*] *и.* Философияның төп мәсьәләһендә материяны, тәбиғәтте, тормошто, объектив булмышты беренсел тип иҫәпләүе һәм аң менән фекерҙе материяның үҙенсәлеге тип ҡарауы менән идеализмға ҡапма-ҡаршы торған философик йүнәлеш.

♦ **Диалектик материализм** тәбиғәт, йәмғиәт һәм аң үҫешенең дөйөм закондары тураһындағы фән; хәҙерге материализмдың юғарғы формаһы, марксизм-ленинизмдың философик нигеҙе. **Тарихи материализм** йәмғиәт үҫешенең дөйөм законы тураһындағы фән һәм уны танып белеү методологияһы, марксизм-ленинизмдың социаль философияһы.

**МАТЕРИАЛИ́СТ** [*рус.*] *и.* Материалистик ҡарашта торған кеше. *Материалистар һәр әйбер ябай рәүештә генә хәрәкәттә тип ҡарамайҙар, бәлки һәр ваҡыт үҙгәреүҙә, [һәм улар] .. бер-береһе менән тығыҙ .. бәйләнештә тора тип ҡарайҙар.* И. Насыри.

**МАТЕРИАЛИСТИК** *с.* Материализмға мөнәсәбәтле, материализм принциптарына нигеҙле. *Материалистик фән. Донъяға материалистик ҡараш.*

**МАТЕРИАЛЬ** [*рус.* материальный] *с.* **1.** Кеше аңына буйһонмаған, кеше аңынан тыш булған; матди. *Материаль донъя.*

**2.** Мөлкәткә, аҡсаға бәйле; матди. *Материаль база.* ■ *Кешене материаль ҡыҙыҡһындырыу принцибы беҙҙең көндәрҙә лә бик ҙур урын тота.* Ә. Гәрәев.

**МАТЕРИАЛЬ-ТЕХНИК** *с.* Материаль һәм техник яҡҡа бәйле. *Материаль-техник база. Материаль-техник тәьминәт.*

**МАТЕРИ́К** [*рус.*] *и.* **1.** Океан һәм диңгеҙ һыуы менән уратып алынған ҙур ҡоро ер; континент. *Африка материгы.* ■ *Уның [мөһабәт ҡоштоң] теле — дуҫлыҡ теле, тиңһеҙлеккә юл ҡуйманы, емерҙе ул материктар сигендәге ҡойманы.* М. Кәрим.

**2.** *геол.* Ерҙең тупраҡ аҫтындағы ҡатламы.

**МАТЕ́РИЯ** [*рус.* 〈 *лат.*] *и.* **1.** *филос.* Кеше аңынан тыш һәм уға бәйһеҙ рәүештә йәшәгән объектив булмыш. *Материя беренсел, аң икенсел.* ■ *Материя, әйе мәңгелек ул, юҡтан бар һәм барҙан юҡ булмай.* Ш. Бикҡолов.

**2.** Тәбиғәттәге физик есемде тәшкил иткән матдә. *Материяның төҙөлөшө. Материяның һаҡланыу законы.*

**3.** *һөйл.* Туҡыма, тауар. *Роза апай ҡыҙыл материянан бәләкәй флагтар тегә.* Ә. Ихсан.

**МАТИК** [*рус.* мотыга] *и. диал.* Тәпке. *Картуфты матик менән күмеү.*

**МАТҠЫНЫУ** *ҡ.* Матҡып йәбешеү. *Ҡыҙҙар Ҡотлогилденең салғыйына тотондо, Фатиманы ураған юрғанға матҡынды.* Ж. Кейекбаев.

**МАТҠЫУ** *ҡ.* Бармаҡтарҙы батырып аймау. *Матҡып тотоу.* ■ *Зиннәт, ҡапыл ғына Әптелдең яурынынан матҡып, артына әйләндерҙе лә тубығы менән һелтәп ебәрҙе.* Ф. Иҫәнғолов.

**МАТЛАБ** [*ғәр.*] *и. иҫк. кит.* Талап ителгән нәмә, теләгән нәмә. *Ысын күңелдән мин теләктәш баҫҡан һайын, изге матлабҡа табантын юлдар асҡан һайын.* Ш. Бабич.

**МАТЛУБ** [*ғәр.*] *с. иҫк. кит.* Теләккә ярашлы, кәрәкле. *Матлуб булыу.* ■ *Донъяла ҙур үҙгәрештәр булыуы ихтимал булғанға күрә, был һүғыштың булыуы матлуб ине.* М. Ғафури. *Кейеме туҙған булғанға насар уйлау матлуб түгел.* Аҡмулла.

**МАТМУҒ** [*ғәр.*] *с. иҫк. кит.* Ныҡ телэнгән. *Мәржәниҙе еңеп сығыу һеҙгә мәмнүғ дошмандары йыһанға фаш хөсөт матмуғ.* Аҡмулла.

**МАТРА́С** [*рус.* 〈 *нем.*] *и.* **1.** Аҫҡа түшәп ятыу өсөн мамыҡтан һырып эшләнгән нәмә; түшәк. *Мамыҡ матрас. Матрас түшәү.*

**2.** Диван, карауат өсөн эшләнгән пружиналы түшәк. *Диван матрасы.*

**МАТРАСЛЫҠ** *и.* **1.** Матрас тегергә яраҡлы туҡыма. *Буйлы матраслыҡ. Матраслыҡ алыу.*

**2.** *с. мәғ.* Матрасҡа яраҡлы; бер матрасҡа етерлек. *Матраслыҡ тауар. Матраслыҡ мамыҡ.*

**МАТРИАРХАЛЬ** [*рус.* матриархальный] *с.* Матриархатҡа мөнәсәбәтле, матриархатҡа нигеҙле. *Матриархаль ырыу. Матриархаль мөнәсәбәттәр.*

**МАТРИАРХА́Т** [*рус.* 〈 *лат.* + *гр.*] *и.* Туғанлыҡ мөнәсәбәте ҡатын-ҡыҙ буйынса билдәләнеп, ҡатын-ҡыҙҙың өҫтөнлөгөнә нигеҙләнгән тәүтормош йәмғиәт формаһы.

**МА́ТРИЦА** [*рус.* 〈 *лат.*] *и.* **1.** *тех.* Металды ҡыҫып, баҫып эшкәрткәндә ҡулланыла торған типография литерҙарын ҡойғанда һ. б. ҡулланыла торған ҡалып.

**2.** *типогр.* Наборҙан баҫып алынып, ҡағыҙға төшөрөү өсөн стереотип ҡойорға әҙерләнгән ҡатырға, ҡурғаш пластмасса һ. б. соҡоп эшләнгән ҡалып. *Хәҙерге ваҡытта үҙәк газеталар тиражының күп өлөшө туранан-тура ҙур ҡалаларҙың үҙҙәрендә баҫыла, улар матрицаларҙы Мәскәүҙән алалар.* «Совет Башҡортостаны», 1966, 31 март.

**3.** *мат.* Дүрткел схема рәүешендә урынлашҡан математик дәүмәлдәр системаһы.

**МАТРИЦАЛАУ** *ҡ.* Ниҙең дә булһа матрицаһын эшләү. *Наборҙы матрицалау.*

**МАТРО́С** [*рус.* 〈 *гол.*] *и.* Хәрби диңгеҙ флотындағы рядовой һәм хәрби булмаған суднола командирҙар составына инмәгән ябай хеҙмәткәр. *Матрос булып хеҙмәт итеү.*

**МАТРО́СКА** [*рус.*] *и.* Матростар кейә торған ҙур ҡайтарма яғалы күлдәк. / Шул уҡ фасондағы балалар кейеме.

**МАТСА** [*рус.* матица] *и. диал.* Өрлөк. *Әбделкәрим ағай матсаға эленгән аҫылмалы лампаға ут алды.* Ф. Иҫәнғолов.

**МАТУР** *с.* **1.** Күрер күҙгә күркәм, килешле; гүзәл, сибәр; киреһе ямаҡ. *Матур ҡыҙ. Матур сәскә. Матур күлдәк. Матур тауар. // Матурҙы һайлау. Матурҙарҙың матуры. // Матур йылмайыу. Матур бейеү.* ■ *Яңылбикә әҙәп һаҡлағанда ла, матурыраҡ егеттәрҙе, йәш кешеләрҙе күҙ осо менән ҡарап ҡалырға онотмай.* Ғ. Дәүләтшин. *Йомро матур тояғыңды дағаларбыҙ, юрғам; ҡырас матур ялдарыңды уҡаларбыҙ, юрғам* (Халыҡ йырынан). / Ыңғай сифаттары менән үҙенә тартып торған; яғымлы, һөйкөмлө. *Матур*

*кеше. Матур бабай.* ■ *Минең әсәй мәрхүм, яҙыу-һыҙыу белмәһә лә, бик йомшаҡ күңелле, матур тәбиғәтле бер ҡатын ине.* М. Ғафури. / Күңелгә йыуаныс биргән, ләззәтләнеү тойғоһо уятҡан; йәмле. *Матур йәй. Матур көн. Матур кис.* ■ *Текә тауҙың аҫтында иҫәпһеҙ ҙур ҡуңыр йылан һымаҡ боргаланып.. матур йылға ағып ята.* Ғ. Дәүләтшин. *Ниңә бик-бик матур була икән сәскә атҡан саҡта сирендәр.* Ғ. Сәләм. / Ҡолаҡҡа ятышлы, ишетелеше яғымлы; нәфис яңғыраулы. *Матур тауыш. Матур көй. Матур музыка. // Матур йырлау. Матур һөйләү.* ■ *Матур йыр, саф тауыш Аҡселән буйҙарын яңғыратып, әллә ҡайҙарға, алыҫтарға китә.* Б. Бикбай.

**2.** Теләк, ынтылыштарҙы ҡәнәғәтләндергән, рәхәтлек биргән, яҡшы, йәмле, бәхетле. *Матур донъя. Матур киләсәк. // Матур йәшәү.* ■ *Ил иркен итеп, күкрәк кипеп тын алды, алдағы тыныс, матур тормошҡа аяҡ баҫты.* Һ. Дәүләтшина. *[Егет:] — Ә беҙ, Фатима, гөрләтеп түй яһарбыҙ ҙа бер ниндәй мәкерһеҙ-хәтәрһеҙ, пар һандуғастар һымаҡ, сутылдашып, матур торорбоҙ.* Б. Бикбай.

**3.** Рухи яҡтан ҡәнәғәтләнеү хисе тыуҙырған, маҡсатҡа ярашлы; яҡшы. *Матур ниәт. Матур хис. Матур уй. Матур фекер. Матур хыял.* ■ *Дуҫтарға оҙон төн етмәй ҡала. Улар теләктәрҙең, матур өмөттәрҙең осона сыға алмайынса, таң алдынан ғына йоҡлап китә.* Һ. Дәүләтшина. *Үҙе генә батыр, теләге матур, Салауаттай аҫыл ир ҡайҙа* (Халыҡ йырынан).

**4.** *эйл. ф.* **матурым** Иркәләп, яҡын күреп әйтелә.

♦ **Матур әҙәбиәт** художестволы образдар ярҙамында тормошто һүрәтләгән әҙәбиәт төрө.

● *Аҡ матур — саҡ матур, ҡара матур — бик матур.* Әйтем. *Иҫәр ҡыҙығыр матурға, аҡыллы — батырға.* Әйтем. *Матур ҡатын ир күрке, батыр егет ил күрке.* Мәҡәл. *Матур сәскәгә ҡырау тиҙ тейә.* Мәҡәл. *Матур матур күренмәҫ, һөйгән матур күренер.* Әйтем.

**МАТУРАЙТЫУ** *ҡ. ҡар.* **матурлау.**

**МАТУРАЙЫУ** *ҡ. ҡар.* **матурланыу** 2.

**МАТУРҠАЙ** *өндш. ирк.* Ҡыҙҙарға иркәләп әйтелә торған һүҙ; һылыуҡай. *Туҡта, туҡта, матурҡайым, түйғанса ҡарайым һине.* М. Хәй.

**МАТУРҠАС** *өндш. ирк. ҡар.* **матурҡай.**

**МАТУРЛАНЫУ** *ҡ.* **1.** *ҡайт. ҡар.* **матурлау** 2. *[Йәш ҡатын] зарлы бер тауыш менән: «Матурланып йөрөй торған замана үтте инде»,— тине.* М. Тажи.

**2.** Матур булыу, матурға (1 мәғ.) әйләнеү. *Яҙ етте, көндәр матурланды.* ■ *Усманғәле ун алты йәшлек егет булып киткән. Кәүҙәгә ҙурайған, матурланып, егет ҡорона тулып килә.* Ғ. Дәүләтшин.

**3.** *күсм.* Эстәлеге яғынан үҙгәреп, матурға (2 мәғ.) әйләнеү. *Тормош матурланды, йәшәү яҡшырҙы.*

**МАТУРЛАУ** *ҡ.* **1.** Күркәм, килешле, матур итеү; йәм биреү, биҙәү. *Бүлмәне матурлау. Урамдарҙы матурлау. Үҙ-үҙеңде матурлау. Өҫ-башты матурлау. Яланды сәскә матурлай.* ■ *Ҡарасәс үҙенең өй ҡаралдыларын бүлганынса матурлап йыйып ҡуйған.* Ғ. Дәүләтшин.

**2.** *күсм.* Эстәлеге яғынан тулыраҡ, байыраҡ итеү. *Хеҙмәт кешене матурлай.*

● *Күлде ҡамыш матурлай, ирҙе намыҫ матурлай.* Әйтем.

**МАТУРЛЫҠ** *и.* **1.** Төҫ-ө, буй-һыны менән үҙенә тартып торған матур ҡиәфәт; сибәрлек. *Арыҫланғәле хәҙер һылыу егет булып киткән. Өҫтөнә кейгән ҡыҙылармеец кейеме уның матурлығын тағы ла арттырып ебәргән.* Ғ. Дәүләтшин.

**2.** Күңелгә рәхәтлек, йәнгә ләззәт биргән сифат; гүзәллек. *Ер, ғәжәп бит һинең матурлығың! Һөйәм ҡыштың хрусталь ҡарын да, шаулап япраҡ ҡойған алтын көҙөн, аҡ томанлы июль таңын да.* М. Харис. *Матурлыҡты һөйгән кешеләр бөйөклөктө нығыраҡ беләләр.* Д. Юлтый.

● *Батырлыҡта — матурлыҡ.* Әйтем. *Матурлыҡ түйҙа кәрәк, аҡыл көн дә кәрәк.* Әйтем.

**МАТЧ** [*рус.* 〈 *ингл.*] *и.* Төрлө спорт буйынса ике арала үткәрелгән ярыш. *Донъя беренселегенә өсөн шахмат матчы.*

**МАТША** *с. диал.* Аҡылдан яҙған; тиле. *Матша кеше. // Матшаға әйләнеү.*

**МАТШАЛАНЫУ** *ҡ. диал.* Аҡылдан яҙыу; тилереү.

**МАТӘМ** [*фарс.*] *и. иҫк. кит.* Танылған кеше үлгәндә йәки ҙур афәт килгәндә белдерелә торған ҡайғы. *Матәм көнө. Матәм көйө.* ■ *Матәм маршы киҫте йөрәктәрҙе, бөтә баштар түбән эйелде.* М. Хәй.

**МАУ** *с. диал.* Миңрәү, аңра. *[Бисәләр:] Мау баш булмаҫ ерҙән мау баш булырһың, бынаулайтып хәсрәт уты йотоп ултырғас.* Һ. Дәүләтшина.

**МА́УЗЕР** [*рус.* 〈 *нем.*] *и.* Автоматик пистолеттың бер төрө. *Михайловтың өҫтөндә йәшел гимнастерка, зәңгәр галифе, билендә оҙонса кобуралы маузер һалынып тора ине.* Ә. Вәли.

**МАУЗУҒ** [*ғәр.*] *и. иҫк. кит.* Тема. *Төрлө ҡош-ҡорт менән мәҫәләләрем өсөн маузуғ булды.* М. Ғафури.

**МАУИ** [*ғәр.*] *с. иҫк. кит.* Зәңгәр. *Мауи күҙҙәре, нескә ҡараштары.. һәр кешене үҙенә тартмаҡта ине.* Ә. Иҫәнбирҙин.

**МАУҠАШЛАУ** *ҡ. диал.* Ауырыҡһыныу. *Мауҡашлап тороу.*

**МАУЫҒЫУ** (мауыҡ*ғ*) *ҡ.* **1.** Үҙ-үҙеңде онотоп, бөтә булған иғтибарҙы берәй нәмәгә йүнәлтеү. *Мауығып тыңлау. Мауығып һөйләү.* ■ *Үҙ эшем менән мауығып, һине бөтөнләй баштан сығарғанмын.* Н. Иҙелбай. / Берәй нәмәгә күңел һалыу, берәй нәмә менән ихлас ҡыҙыҡһыныу. *Театр менән мауығыу. Рәсем төшөрөү менән мауығыу.*

**2.** *һөйл.* Әүрәтешеү, ҡарығыу (бесәйҙәргә ҡарата).

**МАУЫҘ** *и. диал. ҡар.* **мәскәй** 2.

**МАУЫҠ** *и.* Күңелдәге көслө теләк. *Бер яңылыҡ күрһәм, бала һымаҡ, ҡарап торам мауҡым ҡанғанса.* М. Тажи.

□ **Мауыҡ булыу** *һөйл.* берәй нәмәгә күңел биреү; әүрәү, мауығыу. *Анау малай уйынға мауыҡ булып, ашарға ла ҡайтмай йөрөй.*

**МАУЫҠТЫРҒЫС** *с.* Күңелде үҙенә тартҡан, әүрәткес, ҡыҙыҡлы. *Мауыҡтырғыс китап. Мауыҡтырғыс экскурсия. Мауыҡтырғыс сәйәхәт. Мауыҡтырғыс эш.* ■ *Ҡыш боҙ аҫтынан балыҡ*

*тоторға мин яңырак әүәҫләндем. Ғәләмәт кыҙык, мауыктырғыс нәмә икән ул.* Ф. Исәнғолов.

**МАУЫКТЫРЫУ** *к.* Күңелде аулау; әүрәтеү. *Музыка менән мауыктырыу.* ■ *Ерҙең күҙгә күренмәгән тәрәнлектәренән нефть эҙләү мине мауыктырҙы.* Ш. Янбаев.

**МАУЫЛ** *и. диал.* Кәштә.

**МАУЫРЛАК** *и. диал.* Кирбес йәки саман өйҙөң өрлөк башы аҫтына һалына торған ағас. *Мауырлак һалыу.*

**МАХ** [*рус.*]: **мах биреү** *һөйл.* ниндәйҙер эштә үҙеңде һынатыу; һыр биреү. *[Акназаров Ридаһың] эштәрен үҙе тикшереп барҙы. Мах бирһәләр, .. «Клубтан сыкмайһығыҙ, ә эшегеҙ артта кала»,— тип арт һабактарын укытмаксы булды.* Ә. Вәли. *Мах бирмәй ук йөрөнөм дошмандарға кулдарымда форсат бар сакта* (Халык йырынан).

**МАХАН** *и. диал.* 1. Ит. *Махан алыу. Махан һатыу.*

**2.** Үпкә-бауырҙан, эс-карындан тукмасһыҙ, ярмаһыҙ бешергән аш.

**МАХАУ** *и. һөйл.* Йоғошло яман тире ауырыуы.

**МАХИЗМ** [*рус.* 〈 *нем.*] *и.* 20 быуат башындағы философияла һәм фән методологияһында Э. Мах, Р. Авенариус һәм уларҙың шәкерттәре тарафынан эшләнгән субъектив-идеалистик йүнәлеш.

**МАХИНАЦИЯ** [*рус.* 〈 *лат.*] *и.* Яуыз ниәт менән башкарылған аҫтыртын эш. *[Ырымбурҙың] төрлө махинация юлдары менән байып, ҙур байҙар менән ярышыу дәрәжәһенә килгән .. кесерәк буржуазияһы бар ине.* З. Шәрки.

**МАХИСТ** [*рус.*] *и.* Махизм юлынан барған кеше.

**МАХЛАС** [*ғәр.*] *и. иҫк. кит.* Таяныс. *Ант итәм мин ихласым дәртем менән, һеҙ һөйөклө махласым — халкым менән.* Ш. Бабич.

**МАХМУР** [*ғәр.*] *и.* Күп эскәндән һуң иртәгеһенә була торған каты ауырыу. *[Әпкәләев:] Махмурҙан баш сатнай.. Кана, булмаһа балыңды, балыңды койоп бир, Йәмлиха һылыу!* Ғ. Әхмәтшин.

**МАХОВИК** [*рус.*] *и. тех.* Поршенлы машиналарҙың валына куйылып, уның әйләнешенә тигеҙлек бирә торған ауыр тәгәрмәс. *Төпкәрәк киткән һайын трактор ныгырак кумелә бара. Ә инде һыу маховикка килеп еттеме, был алаптай тәгәрмәс шыйлатып юғарыға һыу һиптерә башлай.* Р. Солтангәрәев.

**МАХОРКА** [*рус.*] *и.* **1.** Эт карағаты һымактар ғаиләһенә карған, япрағы һәм һабағынан тәмәке ала торған үлән. *Махорка ултыртыу.*

**2.** Шул үләнде турап яһаған түбән сортлы тәмәке. *Элек тартһа якшы папиростар, ул төрмәлә тартты махорка.* Ғ. Хәйри.

**МАХСУС** [*ғәр.*] *с.* **1.** Кем йәки нимәлер өсөн айырым тәғәйенләнгән, үҙенә бер төрлө; үҙенә башка. *Махсус эш кейеме. Махсус стипендия. Махсус аппарат. Махсус кулайлама. Махсус рәүештә. Махсус килеү.* ■ *Өфөлә «Яңы ауыл» тибындағы махсус крәҫтиән газеталары, «Кооператорҙар», «Һабан» исемендәге махсус крәҫтиән журналдары сыға башланы.* Ғ. Хөсәйенов. // *Үҙҙәре өсөн махсус тегелмәгән оҙон шинелдәренең салғыйҙарын һөйрәтеп, төндәр буйы кала урамдарында патрулдәр йөрөй.* А. Карнай.

**2.** Айырым фән, техника, һөнәр, сәнғәт һ. б. өлкәләргә карған. *Махсус укыу йорто. Махсус программа. Махсус һүҙлектәр. Махсус доклад. Махсус мәктәп. Махсус белем.*

**3.** Хәл ителеше ашығыс булған; кисектергеһеҙ. *Махсус ултырыш. Махсус сара. Махсус карар.*

**МАХСУСЛАШТЫРЫУ** *к.* Билдәле бер эштә йәки ниндәйҙер өлкәлә файҙаланыу өсөн кулайлаштырыу, билдәләү. *Хужалыкты кошсолок эшенә махсуслаштырыу.*

**МАХСУСЛАШЫУ** *к.* Билдәле бер эшкә кулайлашыу, айырым бер өлкәгә йүнәлтелеү. *Йәшелсә етештереүгә махсуслашкан хужалык.*

**МАҺАЙТЫУ** *к.* Маһайырға ирек биреү, маһайырға юл куйыу. *Кешене маһайтыу.* ■ *Атаһы теҙгенде кыҫка тотто: малайҙы уйынға-маҙарға сығарыу, купшырак кейем менән маһайтыу юк, гел эш тә эш, селәүсен һымак ер сокоу.* Б. Бикбай.

**МАҺАЙЫУ** *к.* Үҙ-үҙеңде ҙурға һанау, үҙеңде шәпкә куйыу, һауаланыу. *Дала яткан бында электән, маһайған ул: «диңгеҙ үҙе хатта тыңләшә алмай минең киңлеккә!»* Ғ. Әмири. / Ғорурлык тойғоһо кисереү; ғорурланыу. *Кайһы әсәлә юк үҙенең улы, үҙенең кыҙы менән маһайыу?* Р. Ниғмәти.

● *Кайын туҙына маһайыр, имән үҙенә маһайыр.* Әйтем.

**МАҺАЙЫШЫУ** *к. урт. кар.* **маһайыу.** *[Йөҙөккә:] Шәп булмаһам, мине лә үҙегеҙ менән бергә алып китер инегеҙ. Йәнәһе үҙҙәре бригадир булып кайткандар ҙа маһайышып ултырған булалар.* Һ. Дәүләтшина.

**МАҺИР** [*ғәр.*] *с. кит.* Берәй нәмәгә һәләтле; оҫта. *Маһир булыу.* ■ *Был заманда тыуған юк уға [Мәржәнигә] тиңдәш мәғрифәтле ирҙәрҙән быңдай маһир.* Акмулла.

**МАҺИРЛЫК** *и.* Берәй нәмәгә һәләтлек; оҫталык. *Фекерләү маһирлығы.* ■ *Бабичтың шиғыр музыкаһы, поэтик музыкаллек тыуҙырыуҙағы маһирлығын әҙәбиәт ғалимдары әле булһа өйрәнеп сыға алғандары юк.* К. Әхмәтйәнов.

**МАҺИӘТ** [*ғәр.*] *и. иҫк. кит.* Берәй нәмәнең нигеҙе, асылы. *Әҫәрҙең маһиәтенә төшөү.*

**МАҺ-МАҺ** *сакр.* Эт сакырғанда әйтелә. — *Кашкар, маһ-маһ! — тип сакырҙы Ишгуған.. Эт әйәрмәне.* З. Биишева.

**МАЧТА** [*рус.* 〈 *гол.*] *и.* **1.** Карапка елкән короу, юғарынан тороп күҙәтеү, сигнал биреү һ. б. өсөн хеҙмәт иткән бейек бағана. *Мачтаһында был карапты елберләй кыҙыл флаг.* Ғ. Әмири.

**2.** *тех.* Төрлө максат (электр сымдары элеү, антенна күтәреү һ. б.) өсөн хеҙмәт иткән бейек королма. *Радио мачтаһы.*

**МАШ** [*фарс.*] *и. иҫк.* Куҙаклы үҫемлектең бер төрө. *Куренмәҫ баш уның алдында бер маш.* М. Ғафури.

**МАША** [1] [*фарс.*] *и. иҫк.* Шәм кайсыһы.

**МАША** [2] *и. диал.* Шама. *Сәй машаһы.*

**МАШАЛЛА** [*ғәр.*] *ымл. иҫк.* Ғәжәпләнгәндә, һокланғанда әйтелә («алланың теләгәне» тигән мәғәнәлә).

**МАШИНА** [*рус.* 〈 *фр.*] *и.* **1.** Бер энергияны икенсе энергияға әйләндереп, файҙалы эш башҡара торған механизм йәки механизмдар йыйылмаһы. *Пар машинаһы. Теген машинаһы. Урғыс машина. Электронлы иҫәпләү машинаһы. Машина майы.* ■ *Машиналар менән уйын да һуң, рәхәт тә һуң эште башҡарыу.* Ғ. Мәсғүт. *Йорттарҙың ҡайһыныһына инһәң дә .. кер йыуыу һәм тегеү машиналары, кәштәләр тулы китаптар..* М. Хисмәтуллин. **Аяҡ машинаһы** аяҡ менән әйләндерә торған тегеү машинаһы. **Ҡул машинаһы** ҡул менән әйләндерә торған тегеү машинаһы.

**2.** *һөйл.* Автомобиль. *Еңел машина. Йөк машинаһы.* ■ *Оло юлдан машиналар тегеләй ҙә былай ҙа өҙлөкһөҙ үтеп кенә тора.* Н. Бикметов.

**МАШИНАЛАШТЫРЫЛЫУ** *ҡ. төш. ҡар.* **машиналаштырыу.** *Республикала ерҙе эшкәртеү һәм иген йыйыу төтөш тиерлек машиналаштырылған.* М. Хисмәтов.

**МАШИНАЛАШТЫРЫУ** *ҡ.* Эште машина хеҙмәтенә күсереү, машина менән тәьмин итеү. *Ауыл хужалығын машиналаштырыу.*

**МАШИНАЛАШЫУ** *ҡ.* Машина хеҙмәтенә күсеү, машина менән тәьмин ителеү.

**МАШИНА-ТРАКТОР** [*рус.* машинно-тракторный]: **машина-трактор станцияһы** 1928—1958 йылдарҙа колхоздарҙы ауыл хужалығы машиналары менән тәьмин итеп торған ойошма. *Ул ҡыҙ быйыл ғына ауыл хужалығы институтын тамамлаған һәм машина-трактор станцияһына эшкә ебәрелгән Абызбаева ине.* Ә. Вәли.

**МАШИНИСТ** [*рус.*] *и.* Машина менән эш иткән кеше. *Экскаватор машинисы.* / Локомотив йөрөткән кеше. *Машинист дуҫ, йә һин паровозды аҡрынайтыр инең бер аҙға.* Ғ. Сәләм.

**МАШИНИСТКА** [*рус.*] *и.* Яҙыу машинкаһында эшләгән ҡатын-ҡыҙ.

**МАШИНКА** [*рус.*] *и.* **1.** Берәй нәмә эшләүгә тәғәйенләнгән бәләкәй генә прибор. *Сәс машинкаһы.*

**2.** Хәреф төшөрөлгән клавиштарға баҫып, текст күсереп яҙа торған механизм. *Машинка эргәһендә Зөһрә ултыра. Ул машинкала ниҙер яҙа.* Р. Ниғмәти.

**МАШТИМ** *с. диал.* Наҙан. *[Әнеһе — ағаһына:] Яҙып ҡуй берәй ереңә. Һин бит минең һымаҡ маштим булып, сей наҙан ҡалған әҙәм түгел.* С. Кулибай.

**МАЪМАЙ** *и. бал.* Эт, көсөк. *Аҡыллы маъмай йоҡлап тик ятмай, йорт тирәләрен, хужаһын һаҡлай.* К. Кинйәбулатова.

**МАЯ** [*фарс.*] *и.* **1.** Ҡош-ҡорт ситкә һалмаһын өсөн ояһында ҡалдырыла торған йомортҡа. *Мая ҡалдырыу. Мая һалыу.* ■ *Ике рәт араһында ҡалған Гүзәл.., яландар буйлап бик оҙаҡ йөрөнө, ояһынан маяһын алған тауыҡ һымаҡ әҙләнеп, баҫыуҙан-баҫыуға сапты.* И. Ғиззәтуллин.

**2.** *күсм.* Берәй нәмәнең башланғыс нигеҙе. *Полковник Богданов үҙе алып сыҡҡандарҙан ике меңгә яҡын кешене мая итеп Мәскәү эргәһендәге ҡалаларҙың берәһенә яңы дивизия төҙөргә китте.* Д. Исламов. *Ғүмереңдең һәр көнө дөйөм эш өсөн ниндәй ҙә булһа .. мая булып төшөүен тойоу күңелдә бөткөһөҙ горурлыҡ, шатлыҡ уята.* З. Биишева. / Төп нигеҙ булып торған мал һәм мөлкәт; ҡур. // *Мая мал.* ■ *Ошо ваҡыт араһында ул үҙенә донъя көтөрлөк мая туплап алған.* Б. Бикбай. / Һаҡлыҡта ятҡан байлыҡ, һаҡлыҡ аҡса. — *Юл расходына тип, беҙгә аҡса ла һалғандар. Уға мохтаж түгелбеҙ ҙә түгеллеген. Һаҡлыҡ кассаһында ла маябыҙ юҡ түгел.* Ғ. Ғүмәр.

**МАЯҠ** [*рус.*] *и.* **1.** Сигнал уты менән караптарға юл күрһәтеү өсөн диңгеҙ ярҙарына эшләнгән бейек ҡоролма. *Алыҫта маяҡ уттары күренә. Әнүәр шул уттарға ҡарай. Тулҡындар йырын тыңлай.* Ғ. Әмири.

**2.** Ҡышҡы юлдың буйына билдә өсөн ҡаҙалған сыбыҡтар. *Маяҡ ҡуйыу.* ■ *Ана бер ауыл кешеһе санаһына нимәлер тейәгән дә маяҡлы юл буйлап тауға табан үреләә.* Д. Юлтый. *Оло юлда маяҡтар бар юлаусы аҙашмаҫҡа* (Халыҡ йырынан).

**3.** *күсм.* Ниндәй ҙә булһа эшкә юл күрһәтеүсе. *Беҙҙең өсөн маяҡ булыр иптәш Ленин һүҙҙәре.* Б. Ишемғол. *Тыуған партиям, һин, маяҡ булып яҡтыртаһың бөтә ер шарын.* Я. Ҡолмой.

**4.** күсм. Өлгө булырлыҡ кеше, хеҙмәт алдынғыһы. *Хеҙмәт маяҡтары. Производство маяғы.*

**МАЯЛЫҠ** *и.* **1.** Маяға һала торған йомортҡа. *Ояға маялыҡ һалыу.*

**2.** *күсм.* Башланғыс итеп тәғәйенләнгән аҡса йәки мал. *Маялыҡ ҡалдырыу.*

**МАЯТНИК** [*рус.*] *и.* **1.** Өҫкө осо нығытылып, түбәнге ауыр башы бәүелеп торған ҡулайлама. *Маятник тирбәлеше.* **Секундлы маятник** *физ.* тирбәлеү ваҡытының яртыһы бер секундҡа тигеҙ маятник.

**2.** Кеҫә һәм ҡул сәғәте механизмдарының ритмлы йөрөшөн тәьмин итеп, үҙ күсәрендә төрлө яҡҡа хәрәкәт итә торған ҡуласа. *Сәғәт маятнигы.*

**МАЯТНИКЛЫ** *с. махс.* Маятник хәрәкәтенә нигеҙләнгән, маятнигы булған. *Маятниклы сәғәт.*

**МАЯУ** *и. диал. ҡар.* **мая** 1.

**МЕБЕЛСЕ** *и.* Мебель яһаусы. *Мебелселәр бригадаһы.*

**МЕБЕЛЬ** [*рус.* 〈 *фр.*] *и.* Өй йыһаҙы (ултырғыс, өҫтәл, шкаф, диван һ. б.) *Йомшаҡ мебель. Мебель магазины. Мебель фабрикаһы. Фабрика күп төрлө мебелдәр эшләп сығара.*

**МЕГАФОН** [*рус.* 〈 *гр.*] *и.* Һөйләгән тауышты көсәйтеп, билдәле йүнәлеш бирә торған махсус ҡулайлама; рупор.

**МЕДАЛЬ** [*рус.* 〈 *фр.*] *и. ҡар.* **миҙал.**

**МЕДАЛЬОН** [*рус.* 〈 *фр.*] *и.* Эсенә рәсем йәки башҡа нәмә һалып, муйынға тағып йөрөтә торған бәләкәй генә йомро йәки оҙонса итеп эшләнгән затлы биҙәү әйбере. *Медальон сылбыры. Медальон тағыу.*

**МЕДИАНА** [*рус.* 〈 *лат.*] *и. мат.* Өсмөйөштөң түбәһенән ҡаршы яҡтың уртаһына үткәрелгән тура һыҙыҡ.

**МЕДИАТОР** [*рус.* 〈 *лат.*] *и.* Ҡыллы музыкаль инструменттарҙы сиртеп уйнау өсөн ҡулланылған осло башлы пластинка. *«Аяҡ бармаҡтары араһына медиатор ҡыҫтырып, мандолин уйнай торған әкәмәт шаян Шәйхзада Бабич тигән*

*шәкерт бына шул була инде»,— тине Сабит.* С. Ҡудаш.

**МЕ́ДИК** [*рус.* ⟨ *лат.*] *и.* Медицина буйынса белгес. *Медиктар кәңәшмәһе.*

**МЕДИКАМЕ́НТ** [*рус.* ⟨ *лат.*] *и. кар.* **дарыу.** *Ауылда медпункт асылған, унда тәжрибәле работник ҡуйылған, кәрәкле медикаменттар алынған.* «Совет Башҡортостаны», 1966, 28 июнь.

**МЕДИЦИ́НА** [*рус.* ⟨ *лат.*] *и.* Төрлө ауырыуҙар, уларҙы булдырмау һәм дауалау юлдары тураһындағы ғилемдәр йыйылмаһы. *Эксперименталь медицина. Медицина ярҙамы. Медицина институты.* **Космос медицинаһы** кешенең космоста хәүефһеҙ йәшәү һәм эшләү мөмкинлеген булдырыуға йүнәлтелгән фәндәр комплексы. **Халыҡ медицинаһы** халыҡтың күп быуатлыҡ тәжрибәһе нигеҙендә ғәмәлгә килгән дауалау ысулдары.

**МЕДКОМИ́ССИЯ** [*рус.*] *и.* Кешенең һаулығын тикшерә торған комиссия. *Медкомиссиянан үтеү.*

**МЕДПУ́НКТ** [*рус.*] *и.* Медицина ярҙамы күрһәтә торған махсус урын. *Медпункт мөдире. Медпункт асыу. Медпунктта эшләү.*

**МЕДСАНБА́Т** [*рус.*] *и.* Медицина һәм санитария батальоны, шул батальондың медицина пункты.

**МЕДСЕСТРА́** [*рус.*] *и.* Дауалау учреждениеларында эшләгән урта белемле хеҙмәткәр ҡатын-ҡыҙ. *Күрше ауылдан килгән йәш кенә медсестра балаға укол яһаны, дарыу эсерҙе.* М. Тажи.

**МЕДУ́ЗА** [*рус.* ⟨ *гр.*] *и.* Ҡойҡа һымаҡ йомшаҡ тәнле, һәрмәүесле диңгеҙ йәнлеге. *Шторм ярға .. ләм һәм лайлалы медузалар сығарып ташлаған.* Ә. Бикчәнтәев.

**МЕДЭСКАДРО́Н** [*рус.*] *и.* Кавалериялағы медицина подразделениеһы. *Башҡорт кавалерия дивизияһының медэскадронында еңел яраланған һалдаттар күп кенә ине.* Ә. Ихсан.

**МЕЖА́** [*рус.*] *и.* Ерҙе бүлгән сик; ыҙан. *Межа үткәреү. Межа ярыу.* ■ *Ике колхоздың ерҙәре араһынан .. түңгәк булып ҡылған үләне һәм селек сыбыҡтары үҫкән межа үтә ине.* Ә. Вәли. / Баҫыуҙа һөрөлмәй ҡалған тар ғына ер. *Ер башындағы межа менән баҫыу һыртына тиклем күтәрелдем.* Ғ. Кәримов.

**МЕЖАЛАУ** *к.* Ерҙе межалар менән бүлеү, сиген билдәләү, ыҙанлау.

**МЕЗОЗО́Й** [*рус.* ⟨ *гр.*]: **мезозой дәүере** *геол.* Ерҙең геологик тарихында палеозой менән кайнозой араһында торған дәүер.

**МЕЗОНИ́Н** [*рус.* ⟨ *ит.*] *и.* Өйҙөң урта өлөшөнә өҫтәп һалынған икенсе ҡат рәүешендәге бәләкәй генә ҡоролма. *Уның [музейҙың] икенсе ҡатында, мезонинда, 1900 йыл йәй Владимир Ильич менән Надежда Константиновна йәшәгән.* «Совет Башҡортостаны», 1966, 27 ғинуар.

**МЕЙЕ** *и.* **1.** Кеше һәм хайуандарҙа баш ҡыуышында һәм умыртҡа буйында урынлашып, буҙ төҫтәге нервы күҙәнәктәре һәм аҡ төҫтәге нервы туҡымалары тупланмаһынан торған нервы системаһының үҙәк бүлеге. *Баш мейеһе. Алғы мейе. Ҙур мейе. Кесе мейе. Оҙонса мейе. Урта мейе. Аралыҡ мейеһе. Арҡа мейеһе. Мейе олоно. Мейегә ҡан һауыу.* ■ *[Күсәрбайҙың] күҙенән осҡондар сәсрәне, ауыҙ, ҡолаҡ, танау тишектәренән ҡандар бөркөлдө, мейеһе сәсрәп сыҡты.* Т. Хәйбуллин. **Мейеһен күсереү** (*йәки* **сәсрәтеү**) кешенең башына һуғыу (асыуланып һөйләгәндә әйтелә). **Мейе төшөү** (*йәки* **һелкенеү**) ныҡ һелкенеүҙән мейе ҡуҙғалыу. **Мейене ҡағыу** (*йәки* **ултыртыу**) мейе төшкәндә урынына ултыртҡан булып имләү (баш тирәләп бау тарталар ҙа, маңлай, елкә, ике сикә тәңгәлен билдәләйҙәр; шунан һуң, бауҙы урталай бөкләп ҡарайҙар: ҡуйған тамға ҡайһы яҡҡа ҡыйышыраҡ булһа, шул яҡты ҡул менән иҫләп кенә ҡағалар). **Мейе ҡумтаһы** *анат.* баштың мейе ятҡан эске ҡыуышлығы.

**2.** Аҡыл, аң. *Мейеһе юҡ.* **Мейе сыуалыу** фекер асыҡлығы юйылыу, зиһен таралыу. *Кемде тыңларға ла белмәй мейе сыуалып бөттө.* **Мейе томаланыу** уйлау, фекерләү һәләте кәмеү, иҫ юйылыу. *Саҡай ни булғанын башына килтерә алманы, иҫереүҙән, туҡмалыуҙан мейеһе томаланған ине.* Б. Бикбай. **Мейене һыу алыу** иҫһеҙләнеп, аҡыл юйылыу.

◆ **Мейе серетеү** ныҡ уйлау талап ителгән нәмә менән баш ҡаңғыртыу. *[Шәүәли:] Ҡуйсы атай, шайтан һабағы менән мейемде серетмә.* Б. Бикбай. **Һыу мейе** 1) тиҙ онотоусан, хәтерһеҙ; 2) тиҙ генә аңлай алмай торған; миңрәү.

**МЕЙЕ́С** [*рус.* печь] *и.* **1.** Өй йылытыу, бешереү өсөн кирбес йәки тимерҙән яһалған ҡоролма. *Йомро мейес. Икмәк мейесе. Мейес арты. Мейес ауыҙы. Мейес башы. Мейес ҡаҙнаһы. Мейес ҡашағаһы. Мейес соҡалтаһы. Мейес һикәлтәһе. Мейес сығарыу.* ■ *Казарманың икенсе башындараҡ, янып торған тимер мейес өҫтөндә котелок һәм сәйнүктәр сыжылдап ҡайнап ултыра.* А. Карнай. **Оло мейес** икмәк һала торған мейес. **Мейес урыны** мейестең нигеҙе. **Сатлыҡ мейес** матур итеп семәрләп, өсмөйөшләп һалынған бәләкәй мейес.

**2.** Ҡыҙҙырып, төрлө материалдар эшкәртә торған ҡоролма. *Домна мейесе. Кирбес мейесе. Мартен мейесе. Эзбиз мейесе.*

□ **Мейес булыу** мейес ҡыҙып, икмәк һалырлыҡ хәлгә килеү.

● *Бер ағас мейестә лә янмаҫ, ике ағас яланда ла һүнмәҫ.* Әйтем.

**МЕЙЕ́ССЕ** *и.* Мейес сығарыу оҫтаһы, мейес сығарыусы. / *һөйл.* Мейес яғып тороусы.

**МЕЙЕ́ҺЕҘ** *с. һөйл.* **1.** Тиҙ онотоусан, хәтерһеҙ. *Мейеһеҙ булыу.*

**2.** Тиҙ генә аңлай алмай торған, мәшәү. *Ауырыуҙан мейеһеҙ булып ҡалды.*

**МЕКЕР** *с. диал.* Һаран. *Мекер кеше.*

**МЕКЕТӘ** *и. диал.* Иргәйел.

**МЕКСИКАН** *и.* Мексиканың төп халҡын тәшкил иткән милләт һәм шул милләттең бер кешеһе. *Мексикан ҡатыны.*

**МЕЛА́НЖ** [*рус.* ⟨ *фр.*] *и. махс.* Төрлө төҫтәге төрлө нәмәнән иләнгән еп һәм шулептән һуғылған туҡыма. // *Меланж кофта. Меланж туҡыма.*

**МЕЛАНХО́ЛИК** [*рус.*] *и.* Меланхолияға бирелеүсән кеше.

**МЕЛАНХОЛИ́К** *с.* Меланхолияға (1 мәғ.) хас сифаттар менән билдәле. *Меланхолик кеше.*

**МЕЛАНХО́ЛИЯ** [*рус.* ⟨ *гр.*] *и.* **1.** Күңел төшөнкөлөгө, эс бошоу, һағыш.

**2.** Сәбәпһеҙгә күңел төшөнкөлөгөнә бирелеү-

ҙән, бер үк нәмә, идея менән һаташыу сәбәпле психиканың боҙолоуы.

**МЕЛЕК** *и. диал.* Сүмесбаш.

**МЕЛИОРАТИВ** [*рус.* мелиоративный] *с.* Мелиорацияға мөнәсәбәтле. *Мелиоратив эштәр.*

**МЕЛИОРА́ТОР** [*рус.*] *и.* Мелиорация өлкәһендәге белгес. *Мелиораторҙар кәңәшмәһе.*

**МЕЛИОРА́ЦИЯ** [*рус.* ⟨ *лат.*] *и.* Ерҙең уңдырышлығын күтәреүгә йүнәлтелгән саралар йыйымы (тупраҡты яҡшыртыу, һаҙлыҡтарҙы киптереү, ҡоро урындарҙы һуғарыу һ. б.) *Мелиорация эше. Мелиорация үткәреү.* ■ *Илдең ауыл хужалығын тәбиғи казаларҙан ҡотҡарыу йәһәтенән мелиорация эше ҙур урын тота.* «Совет Башҡортостаны», 1965, 11 декабрь.

**МЕЛО́ДИКА** [*рус.*] *и. сәнғ.* **1.** Көй тураһындағы тәғлимәт.

**2.** Айырым композиторҙың йәки халыҡтың ижадына, берәй музыкаль әҫәргә, жанрға хас көй саралары йыйылмаһы.

**МЕЛО́ДИЯ** [*рус.* ⟨ *гр.*] *и. ҡар.* **көй 1.**

**МЕЛОДРА́МА** [*рус.* ⟨ *гр.*] *и.* **1.** *иҫк.* Монолог һәм диалогтар йыр менән музыка ҡатнашлығында алып барыла торған музыкаль драма әҫәре.

**2.** Ғәҙәттән тыш көсөргәнешле ваҡиғаларҙы, көслө тойғоларҙы сағылдырыуға, яманлыҡ менән яҡшылыҡты ҡаршы ҡуйыуға ҡоролған драматик жанр һәм шул жанрҙа яҙылған әҫәр.

**МЕЛОДРАМАТИК** *с.* Мелодрамаға (2 мәғ.) мөнәсәбәтле. *Мелодраматик әҫәр.*

**МЕЛЬХИО́Р** [*рус.* ⟨ *фр.*] *и.* Баҡыр менән никелдән торған көмөшкә оҡшаш иретмә. *Мельхиор ҡалаҡ.*

**МЕМБРА́НА** [*рус.* ⟨ *лат.*] *и.* **1.** Тартылғанда ҡаты тығыҙ хәлгә килгән һығылмалы йоҡа яры (тауыш сығарыу йәки ҡабул итеү өсөн төрлө аппаратта ҡулланыла). *Телефон мембранаһы. Микрофон мембранаһы.*

**2.** *тех.* Үҙенән-үҙе тартылып, һығылып, тирбәлә алған йоҡа ғына һығылмалы пластинка.

**МЕМОРА́НДУМ** [*рус.* ⟨ *лат.*] *и.* Ниндәй ҙә булһа мәсьәләгә ҡарата хөкүмәттең ҡарашын белдереп яҙылған дипломатик документ. *Меморандум ебәреү.*

**МЕМОРИА́Л** [*рус.*] *и.* **1.** Ниндәйҙер тарихи ваҡиға йәки атаҡлы кешенең иҫтәлеген мәңгеләштереү өсөн эшләнгән архитектура ҡоролмаһы. *Ленин мемориалы.*

**2.** Күренекле спортсылар иҫтәлегенә бағышланған спорт ярышы. *Бер туған Знаменскийҙар мемориалы.*

**МЕМОРИАЛЬ** [*рус.* мемориальный ⟨ *лат.*] *с.* Данлыҡлы ваҡиғаның, күренекле кешенең иҫтәлеген мәңгеләштереү маҡсатында эшләнгән. *«Был йортта 1900 йылда В. И. Ленин йәшәгән» тип яҙылған мемориаль таҡта ҡуйылды.* Х. Әхмәтова. *М. Ғафуриҙың элекке квартираһында шағирҙың мемориаль йорт-музейы ойошторолдо.* Ғ. Рамазанов.

**МЕМУАР** [1] [*рус.* мемуары ⟨ *фр.*] *и.* Хәтирәләр рәүешендә яҙылған әҫәр. *Мемуар яҙыу.*

**МЕМУАР** [2] [*рус.* мемуарный] *с.* Мемуарға мөнәсәбәтле; хәтирәләргә нигеҙле, хәтирәләр рәүешендәге. *Мемуар әҙәбиәт. Мемуар әҫәр.*

**МЕМУАРИ́СТ** [*рус.*] *и. ҡар.* **мемуарсы.**

**МЕМУАРСЫ** *и.* Мемуар яҙыусы.

**МЕН** *и. иҫк.* Етешһеҙлек, кәмселек (тәнгә ҡарата).

**МЕНҒЕ** *с.* Һыбай йөрөтөүгә өйрәтелгән, һыбай йөрөү өсөн файҙаланылған. *Менге ат.* // *Менгегә өйрәтеү.* ■ *Сабыштарға китеүсе аттарҙың күбеһе быгаса ҡамыт күрмәгән тай-тулаҡ та ҡырҡмыш булды. Уларҙы малайҙар ғына менгегә өйрәтеп ҡылана ине әле.* Ж. Кейекбаев.

**МЕНГӘШЕҮ** *к.* Бер атҡа икәүләп атланыу. *Ат менгәшеү. Менгәшеп барыу.* ■ ..*Йәйәү ҡаҙаҡтар йүгерешә, иҫән ҡалғандарҙың аттарына менгәшеп, сигенә башланы.* А. Таһиров. *Егет менән ҡыҙ, ат менгәшеп, ҡайтыу яғына киткән* (Әкиәттән).

● *Менгәшеп, яу сабып булмай.* Әйтем.

**МЕНГӘШТЕРЕҮ** *к.* Бер атҡа атландырыу, бергә мендереү. *Мин түҙмәнем .. Машаны атҡа менгәштереп, урманға шылдым.* Я. Хамматов.

**МЕНДЕРЕЛЕҮ** *к. төш. ҡар.* **мендереү.**

**МЕНДЕРЕҮ** *к.* **1.** Юғарыға алып менеү, өҫкә күтәреү. *Күтәреп мендереү. Һөйрәп мендереү.* ■ *Былар дүртәүләп һары май тултырылған батманды өй башына күтәреп мендергәндәр ҙә, ҡыйыҡ аҫтына йәшереп ҡуйғандар, ти* (Әкиәттән).

**2.** Юғарыға, бейек урынға күтәрелергә мәжбүр итеү; үрләтеү. *Батырҙар .. бағанға Буҙансы батырҙы мендерергә булғандар* (Әкиәттән).

**3.** Һыбай атланырға мәжбүр итеү, атланырға ыңғай ҡуйыу; атландырыу. *Тимербулатты бәләкәйерәк кенә ҡара тумалаҡ атҡа мендерҙеләр.* Һ. Дәүләтшина. *Күсәр хан Ҡуҙыйкүрпәсте бер арыҡ ҡына дүнәнгә мендерҙе, ә үҙе иң яҡшы тигән атына атланып алды, ти.* «Ҡуҙыйкүрпәс менән Маянһылыу».

**МЕНДЕРЕШЕҮ** *к. урт. ярҙамл. ҡар.* **мендереү.**

**МЕНДӘР** *и.* Баш аҫтына һалыу өсөн йәтешләп, эсенә мамыҡ йәки башҡа йомшаҡ нәмә тултырып яһаған урын ҡаралдыһы. *Мамыҡ мендәр. Мендәр тышы. Мендәр ябыуы. Мендәрҙе күпертеү. Башты мендәргә һалыу.* ■ *Тәнзилә әбей .. башы мендәргә тейеү менән йоҡлап та китте.* М. Тажи. *Ҡырҙа тыуҙың. Аҡ мендәргә түгел, арыш көлтәһенә һалдылар.* М. Кәрим. **Ҡолаҡ мендәре** бәләкәй генә мендәр. **Сәхтиән мендәре** аҫҡа һалып ултырыу өсөн яһалған сәхтиән тышлы мендәр. **Эйәр мендәре** эйәр өҫтөнә һала торған мендәр.

◆ **Кислородлы мендәр** ауырыу кешене тын алдырыу өсөн хеҙмәт иткән кислородлы тоҡсай. *Эргәһендә [сырхауҙың] «ашығыс ярҙам» булып, кислородлы мендәр ултыра.* Ғ. Әмири. **Мендәргә баҫтырыу** *этн.* килен төшөргәндә, «бәрәкәтле аяғың менән», *тип теләк теләп, ҡаҡ ергә баҫтырмай, мендәргә баҫтырып, өйгә индереү.*

**МЕНЕҮ** *к.* **1.** Юғарыға табан хәрәкәт итеү, бейек урынға күтәрелеү; үрләү. *Ағас башына менеү. Бағанға менеү. Өҫкә менеү. Үргә менеү. Баҫҡыс буйлап менеү. Менеп ултырыу. Ырғып менеү.* ■ *Беҙ ҡалҡыуыраҡ урынға менгәс, алыҫтан бер ҙур ауыл күренде.* Д. Юлтый. *Хөрмәт менән Сабир .. алма ағасына үрмәләп менеп*

*китте.* З. Биишева. / Ҡайҙалыр китеү өсөн транспортҡа ултырыу. *Машинаға менеү. Трамвайға менеү. Вагонға менеү.* ■ *Ғариф дилбегә ҡаҡты, һикерешеп арбаға менеп ултырған малайҙар председателдең яҡшы теләктәренә ҡаршы рәхмәт әйтә белмәнеләр, бары баш ҡына һелкеттеләр.* Б. Бикбай.

**2.** Үрләс ерҙе үтеү. *Тауҙы менеү.* ■ *Бер үрҙе менгәс, был ҡарт атын туҡтатып, хәл алдырҙы.* М. Тажи.

**3.** Һыбай атланыу. *Ат менеү. Эйәрләп менеү.* ■ *Атҡа менегеҙ, ирҙәр, ағалар, асылһын әйҙә иҫке яралар! Яраларҙы ирек уңалтыр, яуыз дошман башын юғалтыр.* Салауат Юлаев. *Ырғып менә, һикереп төшә кавалерист аттарға, ҡанын түгә, йәнен бирә тыуған илен һаҡларға.* Б. Бикбай.

**4.** *күсм.* Етәкселек вазифаһына үрләү. *Власть башына менеү. Тәхеткә менеү.* ■ *Ауыл бөтөнләй үҙгәрҙе. Эш башына ярлылар менде. Рәхим ағай ауыл советына башлыҡ итеп һайланды.* Ш. Шәһәр.

**5.** Йылылыҡ, эҫелек артыу. *Бүлмә температураһы егерме биш градусҡа менде. Ауырыуҙың эҫелеге утыҙ ете градусҡа менде.*

◆ **Атҡа менгәндәй булыу** ныҡ ҡыуаныу. **Өҫтөнә менеп барыу** киҙәнеп, йомолоп килеү.

● *Ағай-эне һуғышыр, атҡа менһә, ярашыр.* Әйтем. *Алты йәшәр атҡа менһә, алтмыш йәшәр сәләм бирер.* Әйтем. *Атҡа менгән ил гиҙер, батыр егет ил биҙәр.* Әйтем. *Балаһы атҡа менеп сапһа, атаһы ботон ҡыҫыр.* Әйтем.

**МЕНЗУ́РКА** [*рус.* ⟨ *лат.*] *и.* Шыйыҡ нәмәнең күләмен үлсәү өсөн ҡулланылған һыҙыҡлы быяла һауыт. *Мензурка менән үлсәү.*

**МЕНИНГИ́Т** [*рус.* ⟨ *гр.*] *и.* Баш һәм арҡа мейеһе ярыһының шешеүе. *Медицинала мейе тиресәһенең шешен менингит тип йөрөтәләр.* «Совет Башҡортостаны», 1971, 2 июль.

**МЕНИ́СК** [*рус.* ⟨ *гр.*] *и.* **1.** *физ.* Тар көпшә эсендәге шыйыҡлыҡтың батынҡы йәки ҡабарынҡы рәүеш алған өҫтө.

**2.** *опт.* Бер яҡ йөҙө батынҡы, икенсе яғы ҡабарынҡы булған линза.

**3.** *анат.* Тубыҡ быуыны эсендәге ярым айға оҡшаш ялпаҡ кимерсәк.

**МЕНСТРУА́ЦИЯ** [*рус.* ⟨ *лат.*] *и. кит.* Күрем.

**МЕНТО́Л** [*рус.* ⟨ *лат.*] *и.* Үтә күренмәле хуш еҫле кристаллик матдә (медицинала, парфюмерияла һәм кондитер эшендә файҙаланыла).

**МЕНЬШЕВИ́ЗМ** [*рус.*] *и.* Россия социал-демократияһындағы төп оппортунистик ағым, халыҡ-ара оппортунизмдың бер төрө.

**МЕНЬШЕВИ́К** [*рус.*] *и.* Меньшевизм яҡлы кеше, меньшевистик партия ағзаһы.

**МЕНЬШЕВИСТИК** *с.* Меньшевизмға мөнәсәбәтле; меньшевиктарға хас.

**МЕНӘҘ** *и. иҫк.* **1.** Кешенең тәбиғәтендә булған ғәҙәт; холоҡ, ҡылыҡ.

**2.** Берәй нәмәнең асылын, тәбиғәтен билдәләгән сифат. *Эштең менәҙе.*

**3.** *ҡар.* **наҙ.**

● *Һөт менән ингән менәҙ һөйәк менән бергә китер.* Әйтем.

**МЕНӘҘЛӘНЕҮ** *ҡ. иҫк.* **1.** Холоҡҡа, ҡылыҡҡа инеп, ныҡыныу; ғәҙәткә әйләнеү. *Яҡуптың 18 йыл буйы мәҙрәсәлә менәҙләнгән ғәҙәте һаман сыҡмай. Һүҙендә, йөрөш-торошонда — мәҙрәсә еҫе.* А. Таһиров.

**2.** *ҡар.* **наҙланыу.** *Менәҙләнеп, ашар-ашамаҫ ултыра.*

**МЕНӘН** *бәйл.* **1.** Эйәлек килешендәге һүҙҙәр менән килеп, бергәлек һәм ҡатнашлыҡ мөнәсәбәтен белдерә. *Иптәш менән килеү. Кеше менән һөйләшеү.* ■ *Уның [Гөлйөҙөмдөң] бынан ун көндәр элек Айбулат менән һөйләшкән һүҙҙәре иҫенә төштө.* Һ. Дәүләтшина. *Ул [Гәрәй] Ләлә менән Пятигорскиҙа осрашыуҙары тураһында һөйләне.* Б. Бикбай. / Төркөмдәрҙе белдергән һүҙҙәргә ҡушылып бергәлек, тулылыҡ мәғәнәһен белдерә. *Ғаиләһе менән. Ауылы менән. Өйөрө менән.* ■ *Шаҡмандар аралары менән хәлле халыҡ.* Б. Бикбай.

**2.** Мөнәсәбәте булған эш-хәлде, нәмәне күрһәтә. *Мәсьәлә менән ҡыҙыҡһыныу.* ■ *Улар [ҡыҙҙар] һыуыҡ балсыҡ менән булышыуҙан өшөп, күгәреп бөткән аяҡ-ҡулын йыуа башланы.* Һ. Дәүләтшина. *[Ҡыҙрас — батшаға:] Ас ҡапҡаңды, мин һиңә йомош менән килдем.* (Әкиәттән).

**3.** Кемдең йәки нимәнеңдер эстәлегендә, сифатында булған нәмәне белдерә. *Был тау мең төрлө матур төҫ менән нурланып, балҡып, күҙҙе сағылдырып тора, ти* (Әкиәттән). *Малың булмаһа ла даның булһын, даны менән киммәт ир башы* (Халыҡ йырынан). / Эш-хәлде ҡылыҡһырлаған нәмәне белдерә. *[Асатайҙың] ҡатыны тиф менән ята.* Һ. Дәүләтшина. / Эш-хәлгә сәбәп, нигеҙ булған нәмәне белдерә. *Рәсәй был һуғыш менән ауыр хәлгә ҡалды.* Д. Юлтый. *Таштуғайҡай елле туғай икән, сәскәләре ҡойола ел менән* (Халыҡ йырынан).

**4.** Файҙаланылған ҡорал-ҡорамалды белдерә. *Сынаяҡ менән сәй эсеү. Балта менән утын сабыу. Ҡалаҡ менән ашау. Китап менән бүләкләү.* ■ *[Әбүзәр] бәкеһе менән ҡурай көпшәһенең ике яҡ осон ентекләп тигеҙләп, ҡабырғаһына тишек яһаны ла ғыжылдатып уйнап та ебәрҙе.* Я. Хамматов. *Ике ботло гер ташын һыңар ҡулы менән генә утыҙ тапҡыр күккә сөйә ине ул [Солтан].* В. Исхаков. *Һалдат уны-быны ҡарап тормай, мылтығының төйҙәһе менән этҡә бирҙе тондорҙо, ти* (Әкиәттән). / Юл йөрөү сараһы булған нәмәне белдерә. *Поезд менән килеү. Самолёт менән осоу.* ■ *Сәғиҙә дәрестә ултырғанда Йомағолдоң мәктәп аты менән урамдан үтеп барғанын күрҙе.* М. Тажи.

**5.** Файҙаланылған сараны белдерә. *Һүҙ менән арбау.* ■ *Рәхимә гәфү үтенгән тауыш менән, йылмайып үҙен аҡланы: — Хәбәр тыңлап оҙаҡлап киттем.* Һ. Дәүләтшина. / Тормош-көнкүреш сараһын белдерә. *Малсылыҡ менән көн итеү.*

**6.** Эш башҡарыу ысулын белдерә.— *Ҡарауыл менән алып китеп барғанда, Сәми ҡасмаҡ булған* (Хикәйәттән).

**7.** Барған юлды, үтәсәк араны белдерә. *Һуҡ-*

*мак менән китеү.* ■ *Беҙҙе кала уртаһынан ҙур урамдар менән алып киттеләр.* Д. Юлтый.

**8.** Эштең, хәрәкәттең башҡарылыу рәүешен белдерә. *Көс-хәл менән килеп етеү.* ■ *Свисток тауышы ишетелеү менән паровоз урмандар яңғыратып бер үкерҙе лә аҡрын ғына ҡуҙғалып китте.* Т. Йәнәби. / Эш-хәрәкәттең башҡарылыу ваҡытын белдерә. *Был хәбәрҙе ишетеү менән Гөлйөҙөм иң тәүҙә Шәһиҙә инәһенә йүгерә.* Һ. Дәүләтшина. *Дүшәмбе көн иртә менән сығып киттек каланан* (Бәйеттән).

**9.** Исем ҡылым йәки үткән заман сифат ҡылымдан һуң төп эш, хәрәкәтте кире ҡаҡҡан икенсе эш, хәрәкәтте күрһәтеү өсөн ҡулланыла. *[Карташев:] Беҙ һүгенеү менән эш булмай бит.* Д. Юлтый.

**10.** *терк. функцияһында* Һөйләм эсендәге тиң киҫәктәрҙе һәм эйәртеүле ҡушма һөйләмдәге эйәрсән һөйләмде баш һөйләмгә теркәй. *Зәйнәп менән Сәйҙел был һүҙҙәрҙән ятып, кыҙарғансы көлдөләр.* Ғ. Сәләм. *[Кыуғынсы:] Бабай, бынан бер егет менән бер кыҙ үтмәнеме?* (Әкиәттән).

● *Ашаған менән мал бөтмәҫ.* Әйтем. *Кәңәш менән беселгән тунда кәмселек булмаҫ.* Әйтем. *Эш менән үткән ғүмер — алтын ғүмер.* Әйтем.

**МЕНЮ́** [*рус.* ⟨*фр.*] *и.* **1.** Бер ваҡытҡа әҙерләнгән аш-һыу төрҙәре. *Меню төҙөү.* ■ *[Кәҙерголов — Шәмсиәгә:] Ҡабат мин сәйханаға йөрөмәйем. Менюғыҙ ярлы. Көн дә бер төрлө аш.* С. Сәйетов.

**2.** Аш-һыу төҙрәрен күрһәткән исемлек (ашханала, ресторан, һ. б. була). *Егет, барабан һуҡҡанға оҡшатып, бармаҡтары менән өҫтәлгә һуға-һуға менюҙы ҡарарға тотонды.* М. Тажи.

**МЕҢ** *төп һ.* **1.** 1000 һаны. *Ике мең. Меңдән артыҡ.* / Кем йәки нәмәнең меңгә тиң иҫәбе. *Мең килограмм. Мең кеше. Мең һум.* ■ *Беҙгә меңдән артыҡ өҫтәлмә ғәскәр килде.* Д. Юлтый.

**2.** *кусм.* Иҫәпһеҙ күп, бик күп. *Мең төрлө уй, катты баш, ни эшләргә лә аптыраш.* Ш. Бабич. *Мең томдарҙа бөтмәҫ роман тыуа, ноталарға һыймаҫ тауыштар.* Ғ. Сәләм. *Мең михнәттәр менән йәшәгәнсә, яуҙа үлеү артыҡ дан менән* (Халыҡ йырынан).

**3.** *и. мәғ.* Бер башҡорт ырыуының исеме. *Сыбы меңе. Өршәк меңе. Меркет меңе. Ҡыбау меңе. Һарат меңе.* ■ *Дим йылғаһы бассейнындағы киң территорияла һәм Ҡариҙелдең түбәнге ағымы буйҙарында мең башкорттары йәшәй.* Р. Кузеев, Б. Юлдашбаев.

♦ **Мең артыҡ** бик күпкә яҡшыраҡ. *[Ямал:] Ирме ни ул, уның ҡуйынында ятканса, бер бесәй балаһын алып ятыу мең артыҡ.* М. Тажи. **Мең башы** хәрби ополчение башлығы. **Меңгә бер** бик һирәк. *[Әбей:] Әйтәм бит, бының кеүек төш ул меңгә бер.* Т. Хәйбуллин. **Мең бәлә (*йәки* ғазап) менән** бик ҙур ҡыйынлыҡтар менән. *[Һалдат:] Мең газап менән эске кейемдәремде калай етте шулай элгеләп бөтөргәс, кабаланып барып шинелгә йәбештем.* Ғ. Дәүләтшин. **Мең йәшә** кешене яҡшы эш өсөн хуплағанда әйтелә.— *Молодец, бабай! Мең йәшә!* И. Ғиззәтуллин. **Мең йәшәр** бик оҙаҡ йылдар йәшәгән. *Уралдың текә каялары, башы күккә тейгән тауҙары, мең йәшәр урмандары аша үткәндә күңелдә ниндәйҙер әйтеп кенә аңлатып булмай торған ҙур тойғо уяна.* К. Мәргән. **Мең рәхмәт** бик ҙур ҡәнәғәтләнеү тойғоһо белдергәндә әйтелә. *Был якшы күңелле ҡатынға мең рәхмәттәр әйтерҙәй булды Тимер.* Б. Бикбай.

**МЕҢГЕҘЕҮ** *к. диал.* Мендереү.

**МЕҢГӘШ** *и. диал. кар.* **мандыш** 1.

**МЕҢДӘРСӘ** *сама һ. кар.* **меңәрләгән.** *Меңдәрсә кеше.*

**МЕҢЕНСЕ** *рәт һ.* Урын тәртибе 1000 менән билдәләнгән. *Меңенсе кеше. Ун меңенсе автомобиль.*

**МЕҢЛЕ** *и.* Бер башҡорт ырыуының исеме. *Меңле башкорттары. Меңлеләр ырыуы.*

**МЕҢЛӘГӘН** *сама һ.* Мең тирәһе. *Меңләгән баш йылҡы.*

**МЕҢЛӘП** *сама һ.* Мең тирәһе, меңгә яҡын. *Меңләп кеше.*

**МЕҢЬЯПРАҠ** *и.* Өйкөм сәскәлеләр ғаиләһенә ҡараған тетмәкәй япраҡлы, аҡ сәскәле дарыу үләне; бысылғы.

**МЕҢӘР** *бүл. һ.* Һәр бере меңгә тиң. *Меңәр һум.*

**МЕҢӘРЛӘГӘН** *сама һ.* Бер нисә мең тирәһе. *Меңәрләгән баш һарыҡ.* ■ *Күл янына һәр йыл һайын меңәрләгән турист бара.* Д. Бураҡаев.

**МЕҢӘРЛӘП 1.** *сама һ.* Мең тирәһе, меңгә яҡын. *Меңәрләп кеше.*

**2.** *р.* Меңәр итеп, мең иҫәбенән, меңәрҙән. *Меңәрләп бүлеү.* ■ *Бына бер заман йотлоҡ килгән: иген уңмаған, бесән үҫмәгән. Халыҡ асыға башлаған. Көн һайын йөҙәрләп тә меңәрләп ҡырылған* (Әкиәттән).

**МЕ́РА** [*рус.*] *и. диал.* Бот, ботлоҡ (иген үлсәү берәмеге). *Арбаға барлығы егерме биш мера арыш тейәлде.* Ғ. Дәүләтшин.

**МЕ́РГЕЛЬ** [*рус.* ⟨*нем.*] *и.* Балсыҡ минералдары һәм кальцит йәки доломиттан торған ултырма тау тоҡомо. *Мергель катламы ауыр быраулана.*

**МЕРИДИА́Н** [*рус.* ⟨*лат.*] *и. геогр.* Ике полюс аша үтеп, Ер шарын уратып алған фарази һыҙыҡ.

♦ **Күк меридианы** *астр.* зенит нөктәһе аша үтеп, йыһан ҡотоптарын тоташтырып торған фарази һыҙыҡ. **Магнит меридианы** *физ.* Ер магнит даирәһенең билдәле бер нөктә аша үткән көс ебенән ер өҫтөнә төшкән проекция һыҙығы.

**МЕРИДИОНАЛЬ** [*рус.* меридиональный] *с. геогр., астр.* Меридиан йүнәлешендәге, меридиан йүнәлешенә тап килгән. *Меридиональ һыҙыҡ.* ■ *Башкортостандың рельефы меридиональ йүнәлештә һуҙылған тау массивынан һәм .. уға эргәләш яткан тау алды тигеҙлектәренән ғибәрәт.* М. Хисмәтов.

**МЕРИНО́С** [*рус.* ⟨*исп.*] *и.* **1.** Нәҙек йомшаҡ аҡ йөнлө һарыҡ тоҡомо һәм шул тоҡомдан булған һарыҡ. *Меринос һарығы.*

**2.** Шул һарыҡтан алынған йөн һәм шул йөндән эшләнгән туҡыма. *Меринос йөнө. // Меринос шәл. Меринос туҡыма.*

**МЕРКАНТИЛИ́ЗМ** [*рус.* ⟨*фр.*] *и.* 15-18 быуаттарҙағы Европа сауҙа буржуазияһының, ил байлығы производство үҫешенән түгел, ә сит илгә күберәк тауар һатып, аҡса капиталы туплауҙан килә, тигән экономик тәғлимәте һәм политикаһы.

**МЕРКУ́РИЙ** [*рус.* ⟨ *лат.*] (*баш хәреф менән*) *и.* **1.** Боронғо Рим мифологияһында сауҙа аллаһы.

**2.** *астр.* Ҡояш системаһындағы планета.

**МЕСТКО́М** [*рус.*] *и.* Профсоюз ойошмаһының урындағы комитеты (1982 йылға тиклем, хәҙер — профком). *Местком ағзаһы. Местком председателе. Местком ултырышы.*

**МЕ́СТНИЧЕСТВО** [*рус.*] *и.* **1.** *тар.* 15-17 быуаттарҙағы Рәсәйҙә: ата-бабаларҙың тотҡан дәрәжәһенә ҡарап юғары дәүләт вазифаларын биләү тәртибе.

**2.** Дөйөм эшкә зыян килтереп урындағы тар мәнфәғәттән сығып эш итеү хәле.

**МЕҪКЕН** [*ғәр.*] *с.* **1.** Ауыр, ҡыҙғаныс хәлдәге (кешегә ҡарата); бахыр. *Меҫкен бәндә.* ■ *Бәлки, меҫкен әсә үлгәндер ҙә инде, уның Тимербулаты ҡайтып өлгөрә алмаҫ.* Б. Бикбай. // *Ямғыр көүек пуля яуа беҙ меҫкендәр башына* (Бәйеттән). / Йәлләгендә әйтелә. *Меҫкен бала.* // *[Ҡыҙ:] Меҫкен. Ҡыҙғанам мин ошо Гөлнурҙы.* Р. Ниғмәти. *Ир балаҡай, меҫкен, ни хәл итһен, юл булмағас уның иркенә* (Халыҡ йырынан).

**2.** Йәлләү, ҡыҙғаныу тойғоһо уята торған; йәлләткес. *Меҫкен ҡиәфәт. Меҫкен тауыш.*

♦ **Башты меҫкенгә һалыу** (*йәки* **һалышыу**) үҙеңде ҡыҙғаныс хәлдә итеп күрһәтеү, йәлләтергә тырышыу. *[Гәрәй:] Ҡара уны, тешеңде артыҡ ялтыратма, меҫкенгә һалыш та кит.* Б. Бикбай. **Меҫкен бүрек** *ҡар.* **бүрек.**

**МЕҪКЕНЛЕК** *и.* Меҫкен, бахыр булыу хәле. *Меҫкенлек күрһәтеү. Меҫкенлек тойғоһо кисереү.*

**МЕҪКЕНЛӘНДЕРЕҮ** *ҡ.* Меҫкенгә әйләндереү. *Йомшаҡ ҡына әйтелгән был һүҙҙәр Фәритте тағы ла меҫкенләндереп ебәрҙе. Уның ауыҙы дүртмөйөшләнеп китте, йәш тулған ҙур ҡара күҙҙәре .. Сәлимә еңгәгә төбәлде.* Ф. Лоҡман.

**МЕҪКЕНЛӘНЕҮ** *ҡ.* Үҙеңде меҫкен итеп күрһәтеп, йәлләтергә тырышыу, меҫкенгә әйләнеү. *Шаһғәли ошондай күңелһеҙ уйҙарҙан бөгөлөп, күпме генә меҫкенләнеп ултырһа ла йәлләүсе булманы.* Ш. Янбаев. *Меҫкенләнеп һин һатаһың, икән намыҫыңды, уйың, хисеңде, йөрөтөргә һинең, юҡ, хаҡың юҡ, кеше тигән бөйөк исемде.* Ш. Бикҡол.

**МЕҪКЕНӘЙЕҮ** *ҡ. диал.* Меҫкенләнеү.

**МЕТА́ЛЛ** [*рус.* ⟨ *гр.*] *и.* Йәнселеүсән, йылы һәм электрҙы яҡшы үткәргән йылтыр төҫлө ябай химик матдә йәки иретмә. *Ҡара металдар. Төҫлө металдар. Ауыр металдар. Еңел металдар. Ҡаты металдар.* ■ *Башҡортостанда ҡара металл, тимер, марганец, хромит рудалары күп.* М. Хисмәтов.

**МЕТАЛЛАШТЫРЫУ** *ҡ.* Металл ялатыу, металл йөрөтөү. *Металлаштырылған ҡағыҙ. Ағасты металлаштырыу.*

**МЕТАЛЛИ́СТ** [*рус.*] *и.* Металл эшкәртеү эшендәге эшсе.

**МЕТАЛЛОЛО́М** [*рус.*] *и.* Эшкә яраҡһыҙ төрлө металл һынығы; тимер-томор. *Металлолом йыйыу.*

**МЕТАЛЛУ́РГ** [*рус.*] *и.* Металлургия буйынса белгес.

**МЕТАЛЛУРГИ́Я** [*рус.* ⟨ *гр.*] *и.* **1.** Ауыр промышленностың руданан металл алыу һәм уны башланғыс эшкәртеү менән шөғөлләнгән тармағы. *Ҡара металлургия. Төҫлө металлургия. Металлургия заводы. Металлургия промышленносы.* ■ *Илебеҙ ҡара металлургияһында иң ҡарт предприятиеларҙың береһе — Белорет металлургия заводы 1762 йылда төҙөлгән.* «Совет Башҡортостаны», 1979, 12 март. *Металлургияны реконструкциялау һәм модернизациялауҙың билдәләнгән программаһын тормошҡа ашырырға.* «Совет Башҡортостаны», 1985, 9 ноябрь.

**2.** Металл иретеү һәм уны башланғыс эшкәртеү ысулдарын өйрәнә торған фән.

**МЕТАМОРФИ́ЗМ** [*рус.* ⟨ *гр.*] *и. геол.* Химик һәм физик сәбәптәр арҡаһында тау тоҡомдарының төҙөлөшө һәм составындағы үҙгәреш процессы. *Тау тоҡомдары метаморфизмы.*

**МЕТАМОРФО́ЗА** [*рус.* ⟨ *гр.*] *и.* **1.** *кит.* Нәмәнең бер форманан икенсе формаға күсеше; үҙгәреш.

**2.** *биол.* Тарихи үҫеш барышында үҫемлек органдарының формаһы һәм төҙөлөшө йәки бер үҫеш стадияһынан икенсеһенә күскәндә хайуандарҙың тышҡы ҡиәфәте һәм тереклек итеү рәүеше үҙгәреү күренеше. *Үҫемлектәрҙең тамыр һәм япраҡ метаморфозаһы. Ҡарышлауыҡтар метаморфозаһы. Ебәк ҡорто метаморфозаһы.*

**МЕТА́Н** [*рус.* ⟨ *фр.*] *и.* Углерод менән водородтың ҡатышмаһынан торған төҫһөҙ газ.

**МЕТАСТА́З** [*рус.* ⟨ *гр.*] *и. мед.* Сирҙең ҡан йәки лимфа менән күсеүе нәтиҗәһендә яңынан икенсе урында көсәйеп, барлыҡҡа килеүе. *Рак метастазы.*

**МЕТАФИ́ЗИК** [*рус.*] *и.* Метафизика яҡлы кеше.

**МЕТАФИЗИ́К** *с.* Метафизикаға (1 мәғ.) нигеҙләнгән. *Метафизик ҡараш. Метафизик материализм. Метафизик метод.*

**МЕТАФИ́ЗИКА** [*рус.* ⟨ *гр.*] *и.* **1.** Диалектикаға ҡапма-ҡаршы буларaҡ күренештәрҙе уларҙың үҙ-ара бәйләнешенән һәм үҫеш процесынан башҡа ҡараған танып белеү методы.

**2.** Донъялағы бөтә нәмәнең нигеҙе һәм башланғысында матди булмаған юғарғы рух тора тип иҫәпләгән идеалистик философик тәғлимәт.

**3.** *ҡусм.* Абстракт, мәғәнәһеҙ фекерләү; буш фекер.

**МЕТА́ФОРА** [*рус.* ⟨ *гр.*] *и. әҙ.* Оҡшатыу һәм сағыштырыу нигеҙендә, һүҙҙең күсмә мәғәнәлә ҡулланылышы (*мәҫ.* «алтын ҡул», «корос беләк»).

**МЕТАФОРИ́К** *с. әҙ.* Метафора рәүешендә ҡулланылған, метафораға нигеҙле. *Метафорик мәғәнә.*

**МЕТЕО́Р** [*рус.* ⟨ *гр.*] *и.* Ҡаты киҫәксәләрҙең — метеорик есемдәрҙең Ер атмосфераһына бик ҙур тиҙлек менән килеп кереүе сәбәпле бөтөнләй тарҡалып, ут хәленә әйләнеүенән ғибәрәт булған күренеш. *Метеор ағымы. Метеор саңы.*

**МЕТЕОРИ́Т** [*рус.* ⟨ *фр.*] *и.* Атмосферала тулыһынса тарҡалмайынса йыһан арауығынан ергә төшкән тимер йәки таш есем.

**МЕТЕОРО́ЛОГ** [*рус.*] *и.* Метеорология буйынса белгес.

**МЕТЕОРОЛОГИК** *с.* Метеорологияға мөнәсәбәтле. *Метеорологик күҙәтеүҙәр. Метеорологик шарттар.*

**МЕТЕОРОЛО́ГИЯ** [*рус.* ⟨ *гр.*] *и.* **1.** Ер атмосфераһының төҙөлөшө, үҙенсәлектәре һәм ундағы процестар тураһындағы фән.

**2.** Һауа хәле һәм уны алдан белеү ысулдары тураһындағы тәғлимәт. *Метеорология станцияһы.*

**МЕТЕОСПУ́ТНИК** [*рус.*] *и.* Метеорологик күҙәтеүҙәр өсөн тәғәйенләнгән яһалма спутник. *Метеоспутник осороу.*

**МЕТЕОСТА́НЦИЯ** [*рус.*] *и.* Метеорология станцияһы.

**МЕТЕР** *окш.* Ҡаты мурт нәмәне ҡыҫып-ҡыҫып ватҡанда сыҡҡан тауышты белдергән һүҙ. *Метер итеп ҡалыу.*

**МЕТЕРЛӘҮ** *к.* Метер-метер итеү, метер-метер килеү. *Метерләп тороу.*

**МЕТЕР-МЕТЕР** *окш.* Ҡабат-ҡабат метер иткән тауышты белдергән һүҙ. *Метер-метер итеү.*

**МЕТИЗ** [*рус.* метизы] *и. тех.* Төрлө кәрәк өсөн тимерҙән эшләнгән ваҡ-төйәк нәмә (тимерсыбыҡ, табаҡлы тимер, ҡаҙау, шөрөп һ. б.). *Метиз заводы.*

**МЕТИ́Л** [*рус.* ⟨ *фр.*] *и. хим.* Углеродтың бер атомы менән водородтың өс атомынан тороп, органик берләшмәләр эсенә ингән төркөм. *Метил эфиры.*

♦ **Метил спирты** еҫе этил спиртын хәтерләткән төҫһөҙ шыйыҡлыҡ; көслө ағыу.

**МЕТИЛЕ́Н** [*рус.* ⟨ *фр.*] *и. хим.* Углеродтың бер атомы менән вородтың ике атомынан тороп, органик берләшмәләр эсенә ингән төркөм.

**МЕТИ́С** [*рус.* ⟨ *фр.*] *и.* **1.** Метислаштырыу һөҙөмтәһендә барлыҡҡа килгән мал йәки үҫемлек.

**2.** Ике раса кешеһенән тыуған бала. / Инд менән европеоид раса кешеһенән тыуған бала.

**МЕТИСЛАШТЫРЫУ** *к. биол.* Тоҡомдо йәки сортты яҡшыртыу маҡсатында төрлө тоҡомдан булған малды йәки төрлө сорттан булған үҫемлекте ҡатнаштырыу.

**МЕ́ТОД** [*рус.* ⟨ *гр.*] *и.* **1.** Тәбиғәтте йәки йәмғиәтте өйрәнеү, танып белеү ысулы. *Диалектик метод. Сағыштырма метод. Эксперименталь метод.*

**2.** Берәй эшмәкәрлек өлкәһендә ҡулланылған алым, алымдар системаһы. *Уҡытыу методы. Эш методы.*

**МЕТОДИК** *с.* Методикаға мөнәсәбәтле. *Методик алым. Методик ярҙам. Методик ҡулланма.*

♦ **Методик рәүештә** билдәләнгән тәртип буйынса, эҙмә-эҙлекле рәүештә, һәр ваҡыт.

**МЕТО́ДИКА** [*рус.* ⟨ *гр.*] *и.* **1.** Эш башҡарышында ҡулланылған методтар йыйымы. *Ғилми тикшеренеү методикаһы.*

**2.** Теге йәки был фәнде уҡытыу методтары тураһындағы тәғлимәт. *Әсә телен уҡытыу методикаһы.*

**МЕТОДИ́СТ** [*рус.*] *и.* Уҡытыу методикаһы буйынса белгес. *Методистар курсы.* ■ *[Сарим Сәлимов] ҡалалағы бер ғилми институтта тел һәм әҙәбиәт буйынса методист булып эшләй ине.* С. Агиш.

**МЕТОДО́ЛОГ** [*рус.*] *и.* Методология буйынса белгес.

**МЕТОДОЛО́ГИК** *с.* Методологияға мөнәсәбәтле. *Методологик анализ. Методологик тикшереү.*

**МЕТОДОЛО́ГИЯ** [*рус.* ⟨ *гр.*] *и.* **1.** Айырым бер фәндә ҡулланылған тикшереү алымдары. *Әҙәбиәт методологияһы. Тарих методологияһы.*

**2.** Донъяны ғилми яҡтан өйрәнеү һәм үҙгәртеп ҡороу методы хаҡындағы тәғлимәт.

**МЕТОНИМИК** *с. әҙ.* Метонимияға нигеҙле, метонимияға мөнәсәбәтле. *Метонимик әйтем.*

**МЕТОНИ́МИЯ** [*рус.* ⟨ *гр.*] *и. әҙ.* Ике аралағы бәйләнеш нигеҙендә бер нәмәнең икенсе нәмә исеме менән аталыуы (мәҫ. «урамдағы халыҡ шаулай», тиеү урынына «урам шаулай», тип әйтеү). / Шул рәүештә ҡулланылған һүҙ. *Метонимия ҡулланыу.*

**МЕТР** [*рус.* ⟨ *гр.*] *и.* **1.** Халыҡ-ара берәмектәр системаһында нигеҙ итеп ҡабул ителгән йөҙ сантиметрға тиң оҙонлоҡ үлсәү берәмеге. *Мәскәүҙән килгән тауарҙар күптән метр менән килә-ләр. Беҙ генә тик аршын менән эш итәбеҙ.* С. Агиш.

**2.** Шундай оҙонлоҡта сантиметр бүлемдәре төшөрөлгән линейка. *Әмирханов .. ҡулына метрҙы алды.* С. Агиш. *Мастер кеше, уңған кеше, метр элгән иңенә.* Т. Арслан.

**МЕТРА́Ж** [*рус.* ⟨ *фр.*] *и.* **1.** Берәй нәмәнең метр менән үлсәнгән оҙонлоғо. *Туҡыманың метражы.*

**2.** Бүлмәнең квадрат метр менән үлсәнгән майҙаны. *Бүлмәнең метражы.*

**МЕТРАНПА́Ж** [*рус.* ⟨ *фр.*] *и.* Типографияла йыйылған наборҙы бит-бит итеп бүлеү менән шөғөлләнгән өлкән наборщик.

**МЕТРИК** *с. әҙ.* Метрикаға[2] мөнәсәбәтле, метрикаға нигеҙле.

♦ **Метрик шиғыр төҙөлөшө** оҙон һәм ҡыҫҡа ижектәрҙең сиратлашып килеүенә нигеҙләнгән шиғыр төҙөлөшө.

**МЕ́ТРИКА**[1] [*рус.* ⟨ *пол.*] *и.* Тыуған йыл тураһындағы танытма. *Метрика дәфтәре минең 1880 йылда тыуғанымды күрһәтә.* М. Ғафури.

**МЕ́ТРИКА**[2] [*рус.* ⟨ *гр.*] *и. әҙ.* Шиғыр үлсәме һәм төҙөлөшө тураһындағы тәғлимәт. / Үлсәм йәһәтенән шиғырҙарҙың төҙөлөшө. / Шиғыр үлсәмдәре йыйылмаһы.

**МЕТРЛАУ** *к.* Метрға һалыу. *Метрлап үлсәү. Метрлап бүлеү.*

**МЕТРЛЫ** *с.* **1.** Метрлап үлсәнә торған. *Метрлы таҫтамал.*

**2.** Бер метр оҙонлоғондағы. *Метрлы ағас.*

**МЕТРО́** [*рус.* ⟨ *фр.*] *и. кар.* **метрополитен.** *Мәскәү метроһы.*

**МЕТРОВКАЛАУ** *к.* Игендең уңышын тамырында саҡта билдәләү өсөн бер квадрат метр ерҙә нисә бөртөк ашлыҡ булғанын билдәләү.

**МЕТРО́ЛОГ** [*рус.*] *и.* Метрология буйынса белгес.

**МЕТРОЛОГИК** *с.* Метрологияға мөнәсәбәтле. *Метрологик тикшеренеүҙәр.*

**МЕТРОЛО́ГИЯ** [*рус.* ⟨ *гр.*] *и.* Үлсәүҙәрҙе, уларҙың бер төрлөлөгөнә ирешеү методтарын һәм талап ителгән аныҡлыҡты өйрәнгән фән.

**МЕТРОНО́М** [*рус.* ⟨ *гр.*] *и.* Ҡыҫҡа-ҡыҫҡа ваҡыт араларын тыҡылдап билдәләп бара торған маятниклы прибор (музыканың һәм башҡа нәмәнең темпын билдәләү өсөн ҡулланыла).

**МЕТРОПОЛИТЕ́Н** [*рус.* ⟨*фр.*] *и.* Ҙур ҡала эсендәге электрлы тимер юл (ғәҙәттә ер аҫтынан үткәрелгән була). *Москва метрополитены.*

**МЕТРОПО́ЛИЯ** [*рус.* ⟨ *гр.*] *и. тар.* Үҙенең колонияларына ҡарата капиталистик дәүләт.

**МЕХ** [*рус.*] *и.* Иләнгән йәнлек тиреһе.

**МЕХАНИЗА́ТОР** [*рус.*] *и.* **1.** Механизация буйынса белгес. *Механизаторҙар курсы.*

**2.** Машиналарҙы һәм механизмдарҙы хеҙмәтләндергән эшсе (ғәҙәттә ауыл хужалығында). *Яхин ниндәй генә тракторға ултырһа ла емертеп эшләй, бик күп йәштәргә механизатор профессияһына эйә булырға ярҙам итә.* Х. Шәрипов.

**МЕХАНИЗА́ЦИЯ** [*рус.*] *и.* **1.** Хеҙмәттең машина һәм механизмдар менән тәьмин ителеше. *Комплекслы механизация.*

**2.** *һөйл.* Билдәле бер эш тармағында ҡулланылған машина һәм механизмдар йыйымы. *Мал ҡаралтылары ныҡ хәҙер, һарайҙарҙа һәр төрлө механизация — һыу эсергестәр, тиреҫ сығарыу механизмдары ҡуйылған.* «Совет Башҡортостаны», 1971, 6 июнь.

**МЕХА́НИЗАЦИЯЛАНЫУ** *к. төш. кар.* **механизациялау.** *Механизацияланған хужалыҡ.* ■ *Механизацияланған Иҫәнгол урман хужалығы коллективы ун беренсе биш йыллыҡ пландарын уңышлы үтәп сыҡты.* «Совет Башҡортостаны», 1986, 16 февраль.

**МЕХАНИЗАЦИЯЛАУ** *к.* Хеҙмәтте машина һәм механизмдар менән тәьмин итеү. *Хеҙмәтте механизациялау.* ■ *Дәүләт хеҙмәт шарттарын яҡшыртыу һәм уны һаҡлау, хеҙмәтте фәнни ойоштороу, халыҡ хужалығының бөтә тармаҡтарында етештереү процестарын комплекслы механизациялау .. хаҡында хәстәрлек күрә.* Башҡорт АССР-ының Конституцияһы, 1984.

**МЕХАНИЗАЦИЯЛАШТЫРЫУ** *к.* Хеҙмәтте машина һәм механизмдар менән тәьмин итеү. *Хеҙмәтте механизациялаштырыу.*

**МЕХАНИ́ЗМ** [*рус.* ⟨ *гр.*] *и.* **1.** Машина һәм төрлө аппараттың көс тәьҫирендә тейешенсә хәрәкәтләнгән үҙ-ара бәйле өлөштәре. *Сәғәт механизмы. Станок механизмы.* / Билдәле бер эш өсөн махсус машина, ҡулайлама. *Ер ҡаҙыу механизмы.*

**2.** *күсм.* Берәй нәмәнең эске төҙөлөшө, системаһы. *Дәүләт механизмы.* ■ *Был һуғыш [батша] хөкүмәтенең бөтә механизмын ҡаҡшатты.* Д. Юлтый. *Бөгөн бюрократизм илебеҙҙең социаль-экономик үҫешен тиҙләтеү һәм ошоноң менән бәйле хужалыҡ итеү механизмын тамырынан үҙгәртеп ҡороу юлында етди кәртә.* «Совет Башҡортостаны», 1986, 26 февраль.

**3.** Физик, химик, физиологик һәм башҡа төрлө күренеште хасил иткән хәл һәм процестар. *Фекер итеү механизмы. Ҡан әйләнеше механизмы.*

**МЕХА́НИК** [*рус.*] *и.* **1.** Механика (1 мәғ.) буйынса белгес.

**2.** Машиналар төҙөклөгөн күҙәтеү, уның эшен ойоштороу менән шөғөлләнгән кеше. *Трактор бригадаһы механигы.*

**МЕХАНИ́К** *с.* **1.** Механика (1 мәғ.) тарафынан өйрәнелгән процесс һәм күренештәр менән бәйле, механикаға мөнәсәбәтле. *Механик хәрәкәт. Механик энергия.*

**2.** Механизм ярҙамында эшләнгән. *Механик быҫҡы.*

**3.** Машина һәм механизмдарҙы йүнәтеү, көйләү эшенә мөнәсәбәтле. *Механик мастерской.* ■ *[Индрил] Ригала механик заводта эшләгән.* Д. Юлтый.

**4.** *күсм.* Уйламай эшләгән, үҙенән-үҙе булған. *Механик хәрәкәт. Механик рәүештә атлау.*

**МЕХА́НИКА** [*рус.* ⟨*гр.*] *и.* **1.** Есемдәрҙең арауыҡтағы хәрәкәтен һәм шул саҡтағы үҙ-ара тәьҫир итешен өйрәнә торған фән. *Теоретик механика.* / Техниканың хәрәкәт һәм көс хаҡындағы фән мәғлүмәттәрен ғәмәлдә файҙаланыу мәсьәләһе менән шөғөлләнгән бер тармағы.

**2.** *күсм.* Берәй нәмәнең ҡатмарлы эске төҙөлөшө. *Революцияның механикаһы.*

**МЕХАНИСТИК** *с.* Механицизм принциптарына нигеҙле. *Механистик материализм. Механистик теория.*

**МЕХАНИЦИ́ЗМ** [*рус.*] *и.* Донъяның күп төрлө ҡатмарлы күренештәрен ябай материя өлөшсәләренең механик хәрәкәтенә, ә ҡатмарлы үҫеш закондарын ябай механика закондарына ҡайтарып ҡалдырған метафизик фекер ысулы.

**МЕХСЫ** *и. кар.* **тиресе.**

**МЕШЕҮ** *и. диал.* Ҡорот тубалы.

**МЕШКӘ** *и. диал.* Ләпәкәй.

**МЕШӘ** *и. диал.* Бешә.

**МЕЩАН** [*рус.* мещанин] *и.* **1.** Революцияға тиклемге Россияла: ҡалалағы ваҡ сауҙагәрҙәрҙән, һөнәрселәрҙән һәм хеҙмәткәрҙәрҙән торған ҡатлам вәкиле.

**2.** *күсм.* Үҙ файҙаһын ғына күҙәтеп, үҙе өсөн генә йәшәй торған тар маҡсатлы кеше. *Мещан бәхете менән ғүмер итеү тере мәйет һай үҙеңдә.* М. Хәй.

**МЕЩАНЛЫҠ** *и.* Мещандарға (2 мәғ.) хас психология. *Мещанлыҡҡа төшөү.*

**МИВӘ** [*фарс.*] *и. иҫк. кит.* Еләк, емеш.

**МИГРА́ЦИЯ** [*рус.* ⟨ *лат.*] *и.* **1.** *тар., этн.* Халыҡтарҙың бер ил эсендә йәки бер илдән икенсе илгә күсеүе. *Эске миграция. Халыҡ-ара миграция.*

**2.** *биол.* Йәшәү шартының үҙгәреүе йәки үҫеш циклының үтеүе сәбәпле йәнлектәрҙең һәм ҡоштарҙың урындан урынға күсеүе. *Ҡоштар миграцияһы. Балыҡтар миграцияһы.*

**3.** *кит.* Ниҙеңдер күсеше, йөрөшө. *Химик элементтар миграцияһы. Үҫемлек күҙәнәктәренең миграцияһы.*

**МИГРАЦИЯЛАУ** *к. кит.* Күсеү, күсеп йөрөү; миграция яһау.

**МИГРЕ́НЬ** [*рус.* ⟨ *фр.*] *и.* Ваҡыт-ваҡыт ҡуҙғала торған ҡаты баш ауырыуы.

**МИҒМАР** [*ғәр.*] *и. иҫк. кит.* Төҙөүсе. *[Бала] ҡулына ағас-таш алыр, өй яһар, миғмарлыҡты өйрәнер.* З. Һаҙый.

**МИҒРАЖ** [*ғәр.*] *и.* Дини ҡарашса, пәйғәмбәрҙең күккә артылышы. **Миғраж төнө** 1) йәнәһе,

Мөхәммәт пәйғәмбәрҙең күккә ашып Мәккәнән Йерусалимға барған төнө; 2) шул төндө билдәләй торған дини байрам.

**МИҒЪЯР** [*ғәр.*] *и. иҫк. кит.* Үлсәм, сама. *Мактанып, карсыға байғош һеҙгә миғъяр булмаған.* Аҡмулла.

**МИҘАЛ** [*рус.* медаль ⟨ *фр.*] *и.* Һүрәтле, яҙыулы металл түңәрәк рәүешендә булып, хәрби батырлыҡ йәки хеҙмәт ҡаҙанышы өсөн бирелә торған махсус билдә. *«Батырлыҡ өсөн» миҙалы.* / Мәктәпте бик яҡшы тамамлаған йәки төрлө конкурс һәм ярышта еңгән өсөн бирелә торған шундай уҡ билдә. *Алтын миҙал. Көмөш миҙал. Мәктәпте миҙал менән тамамлау.* / Ниндәйҙер тарихи ваҡиғаға йәки күренекле эшмәкәр иҫтәлегенә сығарылған шундай уҡ билдә. *Мәскәүҙең 800 йыллығы иҫтәлегенә сығарылған миҙал.*

**МИҘАН**[1] [*ғәр.*] *и. иҫк.* **1.** Ауырлыҡты үлсәй торған ҡорамал; үлсәү, бизмән. *Миҙан табағы.*

**2.** *күсм.* Баһалау өсөн нигеҙ булған сама; үлсәм. *Хәҡикәт миҙаны.*

♦ **Бер миҙан да** бер тамсы ла. *Бер миҙан да гәйебе юҡ.* **Миҙанға һалыу** берәй нәмәнең ыңғай, кире яҡтарын сағыштырыу.

**МИҘАН**[2] *и. ҡар.* **мизан.**

**МИҘГЕЛ** *и.* **1.** Билдәле бер ваҡыт, үҙенсәлекле осор. *Тәүге мәлдәрҙә фронт хәле бик ауыр булды, Ҡыҙыл армияның яңы ғына ойошторолған миҙгеле ине.* Ғ. Ибраһим-Ҡыпсаҡ. *Әбейҙәр сыуағы тигән миҙгел башланды. Был йылы көндәр ҡайһы бер көҙҙәрҙәге кеүек тиҙ генә үтеп китмәнне.* Ә. Вәли.

**2.** Ниндәй ҙә булһа бер эшкә тәғәйенләнгән ваҡыт, мәл, осор. *Бесән миҙгеле. Еләк миҙгеле.* ■ *Хәҙер яҙ башлана, сәсеү миҙгелдәре етә. Баҫыу, ерҙәребеҙ һуғыш аҫтында ята.* Д. Юлтый. *Ҡайғыһы юҡ уның [баланың], күңеле көр, миҙгелендә имһә әсәһен.* Х. Ғәбитов.

**3.** Йылдың тәбиғәттәге үҙгәреш менән билдәләнгән айырым бер осоро; фасыл. *Буленмеш дүрт миҙгелгә ошо бер йыл, миҙгелдәргә ҡарап һәр эште ҡыл.* М. Ғафури. *Кәкүк ҡоштары ла миҙгел һайлай, сәскә бөтһә, теле талыға.* М. Буранғолов. *Иртә түгел, һуң да түгел, миҙгел китте, миҙгел килде, һары һағыш уҙған ерҙе ап-аҡ йоҡо баҫа инде.* М. Кәрим. *Яҙ миҙгелкәйҙәрен шунан беләм: һыҙғырып та оса көйөлдө* (Халыҡ йырынан).

**МИҘГЕЛЛЕ** *с.* Билдәле бер ваҡыт араһы менән сикләнгән; ваҡытлы. *Миҙгелле эш.*

**МИҘГЕЛ-МИҘГЕЛ** *р.* Ҡайһы бер ваҡыттарҙа; ваҡыты-ваҡыты менән. *Һыу батшаһы Аҡбуҙатты менеп, миҙгел-миҙгел Урал буйына сығып әйләнә торған булған.* «Аҡбуҙат».

**МИҘГЕЛҺЕҘ** *р.* Уңайһыҙ, теләһә ниндәй ваҡытта; ваҡытһыҙ. // *Миҙгелһеҙ йөрөү.* ■ *Миҙгелһеҙ ҡайтып китмәк юҡ бер тыуған һуң анаңдан форсат тигән майҙанға.* Аҡмулла.

**МИҘӘТ** *и. диал.* Сәләмәтлек, көс. *Аяғымдың миҙәте юҡ.*

**МИҘӘТЛЕ** *с. диал.* Сәләмәт, көслө. *Яҡындағы сағылда ыласын ултыра икән, ул, ҡоҙғондо күреү менән .. ҡояшҡа ҡарап осто, ҡуктә, бейектә миҙәтле ҡанаттарын йәйеп, бер аҙ талпыныл торҙо.* Ә. Ихсан.

**МИҘӘТҺЕҘ** *с. диал.* Сырхау, кәрһеҙ. *Миҙәтһеҙ бала.*

**МИЖНӘК** [*рус.* межак] *и. иҫк.* Землемер. *Суҡмар, күҫәк, һалмауырҙар менән ҡоралланған башҡорт ирҙәре күтәрелеп сығып мижнәктәргә ташланды.* Ш. Шәһәр.

**МИЗАН** [*ғәр.*] *и.* **1.** (*баш хәреф менән*) *иҫк. астр.* Ун ике бөрөждөң береһе; Сөмбөлә һәм Ғәҡрәп бөрөждәре уртаһында урынлашҡан.

**2.** Ҡояш календары буйынса, етенсе айҙың ғәрәпсә исеме (22 сентябрь — 21 октябрь осоро).

♦ **Миҙан көнө** дини ҡараша, алланың бөтә кешегә хөкөм яһаған көнө.

**МИ-КИ-КИ** *окш.* Кәзә баҡырғанды белдергән һүҙ. *Кәзә әйткән төлкөгә: «Ми-ки-ки-ки, шул яуызды, тотоғоҙ әле шул хәйләкәр түң ауыҙҙы».* С. Ҡудаш.

**МИКЛӘНЕҮ** *к. диал.* Көс-хәлдән ҡалыу; киңгәү.

**МИКРОАШЛАМА** *и.* Үҫемлектәрҙе туҡландырыу һәм уңышын күтәреү өсөн бик әҙ генә миҡдарҙа талап ителгән микроэлементтар (баҡыр, тимер, кобальт, марганец һ. б.) булған ашлама.

**МИКРО́Б** [*рус.* ⟨ *гр.*] *и.* Микроскоп аша ғына күренә торған бер күҙәнәкле организм. *Ауырытҡыс микроб. Әсеткес микроб. Серетекес микроб.*

**МИКРОБИО́ЛОГ** [*рус.*] *и.* Микробиология буйынса белгес.

**МИКРОБИОЛОГИК** *с.* Микробиологияға мөнәсәбәтле. *Микробиологик лаборатория.*

**МИКРОБИОЛО́ГИЯ** [*рус.* ⟨ *гр.*] Микроорганизмдарҙы өйрәнә торған фән.

**МИКРОБЛЫ** *с.* Микробҡа мөнәсәбәтле. *Микроблы күҙәнәктәр.*

**МИКРОБҺЫҘЛАНДЫРЫУ** *к.* Махсус ысул менән эшкәртеп микробтарҙан таҙартыу, микробһыҙға әйләндереү. *Аҡ халаты өҫтөнән [Әмингә] микробһыҙландырылған һары халат кейҙерҙеләр.* Р. Ғабдрахманов.

**МИКРОБҺЫҘЛАНЫУ** *к.* Микробтарҙан таҙартылыу, микробһыҙға әйләнеү.

**МИКРОДВИ́ГАТЕЛЬ** [*рус.*] *и.* Ниндәйҙер энергияны механик энергияға әйләндерә торған бәләкәй размерлы һәм ҡеүәтле двигатель. *Электр микродвигателе. Реактив микродвигателдәр.*

**МИКРОКЛИ́МАТ** [*рус.*] *и.* **1.** Бәләкәй генә бер ерҙең урындағы шарттар менән билдәләнгән үҙ климаты. / *күсм. һөйл.* Әйләнә тирәләге хәл, мөнәсәбәт.

**2.** Һыуытҡыс һәм вентиляция ҡоролмалары ярҙамында бина эсендә яһалма рәүештә барлыҡҡа килтерелгән һауа режимы. *Теплицалағы микроклимат.*

**МИКРОКЛИМАТИК** *с.* Микроклиматҡа мөнәсәбәтле. *Микроклиматик тикшеренеүҙәр.*

**МИКРОКЛИМАТЛЫ** *с.* Микроклимат булдырылған. *Микроклиматлы бүлмә. Микроклиматлы камера.*

**МИКРОКО́СМОС** [*рус.* ⟨ *гр.*] *и.* Иң ваҡ есемдәр (атомдар, электрондар һ. б.) донъяһы.

**МИКРО́МЕТР** [*рус.* ⟨ *гр.*] *и.* Иң бәләкәй оҙонлоҡ үлсәмен дөрөҫ итеп билдәләй торған ҡорал.

**МИКРОМЕТРИК** *с.* Микрометрға мөнәсәбәтле. *Микрометрик үлсәм.*

**МИКРОМЕ́ТРИЯ** *и.* Иң бәләкәй оҙонлоҡтарҙың һәм өлөшсәләрҙең үлсәме.

**МИКРО́Н** [*рус.* ⟨ *гр.*] *и.* Миллиметрҙың миллиондан бер өлөшө.

**МИКРООРГАНИ́ЗМ** [*рус.*] *и.* Ябай күҙ менән күренмәй торған үҫемлек йәки хайуан организмы. *Ауырыу тарата торған микроорганизм.*

**МИКРОРАЙО́Н** [*рус.*] *и.* Райондың бүленешендә иң бәләкәй бер өлөшө. *Өфөнөң Белореченский микрорайонында яңы аэрофлот кассалары асылды.* «Совет Башҡортостаны», 1986, 10 июнь.

**МИКРОСКО́П** [*рус.* ⟨ *гр.*] *и.* Ябай күҙ менән күренмәгән бик ваҡ нәмәләрҙең йәки уларҙың киҫәксәләрен ҙурайтып күрһәтә торған махсус ҡорамал. *Электрон микроскобы. Микроскоп быялаһы. Микроскоптан ҡарау. Микроскоп 200 тапҡыр ҙурайтҡанда кеше сәсе ҡәләм йыуанлыҡ булып күренә.*

**МИКРОСКОПИК** *с.* **1.** Микроскоп ярҙамында эшләнә торған. *Микроскопик анализ. Микроскопик тикшеренеүҙәр.*

**2.** Бик бәләкәй, микроскоп аша ғына күренмәле. *Микроскопик үҫемлек.*

**МИКРОСКОПИ́Я** [*рус.*] *и.* **1.** Ябай күҙ менән күренмәй торған бик ваҡ нәмәләрҙе күҙәтеү ысулдарының дөйөм атамаһы.

**2.** Микроскоптың төҙөлөшө, ҡулланылышы һәм микроскопик препараттарҙың әҙерләнеше тураһындағы практик фән.

**МИКРОСТРУКТУ́РА** [*рус.*] *и.* *махс.* Ҡаты есемдәрҙең микроскоп аша ғына күренгән иң ваҡ эске төҙөлөшө. *Металл микроструктураһы.* ■ *Эҙбиз менән бергә тупраҡҡа аралашҡан кальций матдәһе тупраҡтың микроструктураһын яҡшырта.* «Совет Башҡортостаны», 1967, 17 ғинуар.

**МИКРОФИ́ЛЬМ** [*рус.* ⟨ *гр.*] *и.* Ҡулъяҙма, баҫма йәки график документтың кино йәки фотоплёнкаға ныҡ бәләкәйләтеп төшөргән күсермәһе.

**МИКРОФЛО́РА** [*рус.* ⟨ *гр.*] *и.* Тәбиғи шарттарҙа (тупраҡта, һауала, аҙыҡта һ. б.) була торған микроорганизмдар. *Башҡорт ҡымыҙының микрофлораһын өйрәнеүҙә уңыштарын билдәләп Халыҡ хужалығы ҡаҙаныштары күргәҙмәһе Иван Андреевич Сайгинды алтын миҙал .. менән наградланы.* Н. Ильясов.

**МИКРОФО́Н** [*рус.* ⟨ *гр.*] *и.* Тауыш тулҡындарын электр тулҡындарына әйләндерә торған прибор (тауышты көсәйтеү йәки алыҫҡа ишеттереү өсөн ҡулланыла). *Микрофон трубкаһы. Микрофон мембранаһы.* ■ *Һөйләгән кешенең тауышы микрофон тигән аппараттан үтә лә көсәйтелеп һауаға сығарыла.* С. Агиш.

**МИКРОФОТОГРА́ФИЯ** [*рус.*] *и.* **1.** Микроскоп ярҙамында ҙурайтылған объекттың фотоға төшөрөлөүе.

**2.** Микроскоп ярҙамында төшөрөп алынған объекттың ҙурайтылған фотоһы.

**МИКРОЭЛЕМЕ́НТ** [*рус.*] *и.* Үҫемлек һәм хайуан организмында бик аҙ миҡдарҙа ғына була торған химик элемент. *Микроэлементтарға бор, баҡыр, цинк, молибден, марганец, кобальт, йод, хром һәм башҡа күп элементтар инә.* С. Әбдрәшитов. *Йоморҡа ҡабығы эҙбиз һәм микроэлементтарға бай була.* «Совет Башҡортостаны», 1986, 12 июнь.

**МИ́КСЕР** [*рус.* ⟨ *ингл.*] *и.* **1.** *тех.* Домна мейесенән алынып артабан эшкәртеү өсөн тәғәйенләнгән шыйыҡ суйынды ҡабул итеү һәм йыйыу өсөн булған һауыт.

**2.** Һыуыҡ эсемлектәрҙе тиҙ генә бутау, йомортҡа һәм башҡаларҙы туҡыу, шулай уҡ крем, ҡоктейл яһау өсөн хеҙмәт иткән электр приборы.

**МИКСТУ́РА** [*рус.* ⟨ *лат.*] *и.* Төрлө матдәне бергә ҡушып яһаған шыйыҡ дарыу. *Микстура эсеү.*

**МИКТӘТЕҮ** *к.* *диал.* Киңгәтеү. *Урмандарыбыҙҙа солоҡтарыбыҙ, йылғаларҙа һыҫарҙарыбыҙ, яландарҙа төлкөләребеҙ, быуаларҙа ҡондоҙҙарыбыҙ бөтмәһә, яһаҡ түләү генә беҙҙе миктәтмәҫ.* Ғ. Хөсәйенов.

**МИКТӘҮ** *к.* *диал.* Киңгәү. *Уйлап торһаң, бирәүҙәр донъя мәшәҡәттәренән йонсоп ауырый, икенселәре ишле бала үҫтереп миктәй.* Ғ. Вәлиев. *Уртансы улдары Миңнегәзиз өсөнсө йыл әрәм булып ҡуйҙы.. Ошонан һуң миктәп ҡалды Әсҡәпъямал апай.* Р. Солтангәрәев.

**МИҠАН** *и.* *диал.* Мыйылдаҡ.

**МИҠДАР** [*ғәр.*] *и.* **1.** Берәй нәмәнең иҫәбе, күләме. *Миҡдарын билдәләү.* ■ *[Садри:] Туҡта, ҡарайым әле, кеҫәләге сәрмиә тейешле миҡдарҙы тәшкил итәме икән.* Ғ. Ибраһимов.

**2.** Ваҡыт күләме; сама. *Мөслим старшина ауылында дүрт йыл миҡдары ғалимлыҡта торҙом.* «Батыршаның хаты».

**МИЛ** [*рус.* миля ⟨ *ингл.*] *и.* Төрлө илдә төрлө иҫәп менән йөрөтөлгән юл үлсәү берәмеге. *Рус милы.*

**МИЛАД** [*ғәр.*] *и.* *иҫк.* Дини ҡарашса, Ғайса пәйғәмбәр тыуған тип иҫәпләнгән көн.

♦ **Ҡаблэл милад** *иҫк.* христиан эраһынан элек. **Бәидәл милад** *иҫк.* христиан эраһынан һуң.

**МИЛАДИ** [*ғәр.*] *с.* **1.** Миладтан башланған. **Милади йыл** Ғайса пәйғәмбәрҙең тыуған көнөнән иҫәпләнгән хәҙерге календарь йылы.

**2.** *и.* *мәг.* Христиандарҙа ҡабул ителгән йыл иҫәбе. *Боронғо илаһи ханимдар быны миладиҙан өс йөҙ йыл әүәл үк изге һиғышҡа өндәү ишараһы итеп төшөндөргән.* Ғ. Ибраһимов.

**МИЛЕК** [*ғәр.*] *и.* **1.** Кемдеңдер йәки нимәнеңдер ҡарамағында булып, матди хәлдә билдәләгән бөтә нәмә, бөтә байлыҡ; мөлкәт. *Дәүләт милке. Колхоз милке. Хосуси милек.* ■ *Дәүләт милке — бөтә совет халҡының дөйөм байлығы, социалистик милектең төп формаһы. Ер, ер аҫты байлыҡтары, һыуҙар, урмандар фәҡәт дәүләт милке булып тора.* «Башҡорт АССР-ының Конституцияһы», 1984.

**2.** Кемдеңдер йәки нимәнеңдер биләгән ере; биләмә. *Аҡ ҡуянҡай каса милкенә, Аҡбуҙатҡай ҡуймай иркенә* (Халыҡ йырынан).

**МИЛЕКЛЕ** *с.* Мал-мөлкәтле, бай. *Милекле синыфтар.*

**МИЛЕКСЕ** *и.* Хосуси милек эйәһе.

**МИЛЕКСЕЛЕК** *и.* Милеккә эйә булған хәл. *Ваҡ милекселеккә нигеҙләнгән хужалыҡ.*

**МИЛИТАРИЗА́ЦИЯ** [*рус.*] *и.* Империалистик дәүләттәрҙә бөтә экономик һәм политик тормоштоң илбаҫарлыҡ маҡсатына буйһондоролоуы; хәрби идара методының гражданлыҡ мөнәсәбәттәре өлкәһенә күсерелеше.

**МИЛИТАРИЗАЦИЯЛАНЫУ** *к. төш. кар.* **милитаризациялау.**

**МИЛИТАРИЗАЦИЯЛАУ** *к.* Империалистик дәүләттәрҙә бөтә экономик һәм политик тормошто илбаҫарлыҡ маҡсатына буйһондороу; хәрби идара методын гражданлыҡ мөнәсәбәттәре өлкәһенә күсереү; хәрбиләштереү.

**МИЛИТАРИ́ЗМ** [*рус.* ⟨ *лат.*] *и.* **1.** Империалистик дәүләттәрҙең илде хәрбиләштереү һәм баҫҡынсылыҡҡа әҙерләү политикаһы.

**2.** Капиталистик илдәрҙәге хәрби ҡатламдың политик хакимлығы.

**МИЛИТАРИСТ** [*рус.*] *и.* Милитаризм яҡлы кеше, милитаризм политикаһы алып барған кеше.

**МИЛИТАРИСТИК** *с.* Милитаризмға мөнәсәбәтле. *Милитаристик политика.*

**МИЛИЦИОНЕ́Р** [*рус.*] *и.* Йәмғиәт тәртибен һаҡлаусы милиция хеҙмәткәре. *Участка милиционеры. Пост милиционеры.*

**МИЛИ́ЦИЯ** [*рус.* ⟨ *лат.*] *и.* **1.** СССР-ҙа йәмғиәт тәртибен һәм именлеген һаҡлау бурысы башҡарған дәүләт органы. *Тимер юл милицияһы. Халыҡ милицияһы.* ■ *Милиция эшмәкәрлегендә кала һәм ауылдарҙа, йәмәғәт урындарында, транспорт магистралендә өлгөлө тәртипте тәьмин итеү төп хәстәрлектәрҙең береһе булып тора.* «Совет Башҡортостаны», 1986, 29 ғинуар. / Шул ойошманың урындағы идараһы. *Милиция начальнигы. Милиция бүлеге.*

**2.** *йыйн. һөйл.* Милиция хеҙмәткәре; милиционер.— *Иптәш, һин ҡайҙан килгән милиция?* Ғ. Хәйри.

**МИЛЛИ** *с.* **1.** Милләткә мөнәсәбәтле. *Милли политика. Милли мәсьәлә. Милли бәйһеҙлек өсөн көрәш.* ■ *Ҡурай — башҡорт халҡының милли музыка ҡоралы.* Ғ. Сөләймәнов. *Күп милләтле Совет дәүләте өсөн милли мөнәсәбәттәрҙе үҫтереү ғәйәт ҙур әһәмиәткә эйә.* «Совет Башҡортостаны», 1986, 26 февраль.

**2.** Билдәле бер илгә мөнәсәбәтле. *Милли гимн. Милли флаг.*

**3.** Милләттең үҙенсәлектәрен сағылдырған, теге йәки был милләткә хас. *Милли культура. Милли телдәр. Милли бейеү. Милли ғәҙәт.*

**4.** Айырым, аҙ һанлы халыҡтарға ҡараған. *Милли районлар.*

◆ **Милли аҙсылыҡ** илдең төп халҡы менән сағыштырғанда һан яғынан аҙсылыҡты тәшкил иткән милләт. *Совет Власы милли аҙсылыҡ халыҡтарының мәнфәғәтен яҡлай.* «Ағиҙел», 1965, № 11.

**МИЛЛИА́РД** [*рус.* ⟨ *фр.*] *төп h.* **1.** 1 000 000 000 һаны. *Өс миллиард. Биш миллиард ярым.* / Берәй нәмәнең 1 000 000 000-ҡа тиң иҫәбе. *Ике миллиард һум.* ■ *Бер генә йәй эсендә бер ҡорт күсе сирек миллиардҡа яҡын сәскәнән бал йыя.* «Ағиҙел», 1967, № 3.

**2.** *и. мәғ. күпл.* Кем йәки ниҙеңдер бик ҙур иҫәбе, иҫәпһеҙ күп һаны. *Миллиардтар елгә осто.*

**МИЛЛИАРДЛАҒАН** *сама h.* Миллиард тирәһе. *Миллиардлаған һум аҡса.*

**МИЛЛИАРДЛАП 1.** *сама h.* Миллиард тирәһе, миллиардҡа яҡын. *Миллиардлап кеше.*

**2.** *р.* Миллиард итеп, миллиард иҫәбенән. *Миллиардлап һанау.*

**МИЛЛИГРА́ММ** [*рус.*] *и.* Грамдың меңдән бер өлөшө.

**МИЛЛИМЕ́ТР** [*рус.* ⟨ *лат.*] *и.* Метрҙың меңдән бер өлөшө.

**МИЛЛИМЕТРЛАП** *р.* Миллиметрға һалып. *Миллиметрлап үлсәү.*

**МИЛЛИО́Н** [*рус.* ⟨ *фр.*] *төп h.* **1.** 1 000 000 һаны. *Ике миллион. Өс миллиондан артыҡ.* / Берәй нәмәнең 1 000 000-ға тиң иҫәбе. *Биш миллион һум.* ■ *Сталинград өсөн һуғышта ике яҡтан бөтәһе 2 миллион кеше ҡатнашты. Был гигант һуғышты бөтә донъя күҙәтте.* «Совет Башҡортостаны», 1968, 25 ғинуар.

**2.** Бик күп, иҫәпһеҙ күп. *Мең вә миллион йорт-йыһаздар кем өсөн билдәләнделәр? Кем өсөн миллион әсирҙәр ут йотоп этләнделәр?* Т. Йәнәби. / *и. мәғ. күпл.* Бик күп халыҡ, бик күп кеше. *Миллиондар теләге.*

**МИЛЛИОНЕ́Р** [*рус.* ⟨ *фр.*] *и.* **1.** Миллионлаған һумға йәки башҡа аҡса берәмегенә торош итерлек байлығы булған милек хужаһы. *Революция дәһшәтле һәм ҡапыл башланды. Моңһоҙораҡ ҡылыҡлы миллионер Фазлый Әхмәровты, боҙ өҫтөнә алып ташлаған балыҡ һымаҡ, сараһыҙ хәлгә ҡалдырҙы.* Б. Бикбай.

**2.** Кереме миллион йәки миллионлаған һум менән иҫәпләнгән колхоз. *Миллионерҙар сафына күтәрелгән колхоз.*

**3.** *һөйл.* Миллион йәки миллионлаған километр юл үткән кеше.

**МИЛЛИОНЛАҒАН** *сама h.* Бер нисә миллион тирәһе. *Миллионлаған баш һарыҡ. Миллионланған кеше.*

**МИЛЛИОНЛАП 1.** *сама h.* Миллион тирәһе, миллионға яҡын. *Миллионлап кеше. Миллионлап килеп алыу.*

**2.** *р.* Миллион итеп, миллион иҫәбенән. *Миллионлап иҫәпләү.*

**МИЛЛӘТ** [*ғәр.*] *и.* **1.** Теле, ере, экономик тормошо, психологик үҙенсәлектәре, культура һәм көнкүреш уртаҡлығы менән билдәләнгән, капиталистик йәки социалистик етештереү ысулдары нигеҙендә тарихи яҡтан бер бөтөн булып ойошҡан халыҡ. *Башҡорт милләте. Рус милләте.*

**2.** Дәүләт, ил. *Берләшкән Милләттәр Ойошмаһы.*

**МИЛЛӘТПӘРҮӘР** [*фарс.*] *и. иҫк. кит.* Үҙ милләтен яратҡан кеше; илһөйәр, патриот.

**МИЛЛӘТСЕ** *и.* **1.** Милләтселек (1 мәғ.) ҡарашында торған кеше. *Башҡорт милләтселәре тарафынан алданған башҡорт ғәскәрҙәре Совет власы яғына сыҡтылар.* Р. Ҡузыев. *Хөсәйен Ямашев милләтселәрҙең, байҙар синыфының иң ҙур дошманы булған.* З. Шәрҡи.

**2.** Милли азатлыҡ яҡлы булып, шуның өсөн көрәшкән кеше.

**МИЛЛӘТСЕЛЕК** *и.* **1.** Бер милләтте икенсеһенән өҫтөн ҡуйыуға нигеҙләнгән идеология һәм политика. *Буржуаз милләтселек.*

**2.** Бойондороҡло илдәрҙә империализмға, колониализмға ҡаршы милли бойондороҡһоҙлоҡ өсөн йүнәлтелгән милли хәрәкәт.

**МИЛЛӘТТӘШ** *и.* Бер милләттән булған кешеләр (бер-береһенә ҡарата).

**МИЛТӘ** [*рус.* фитиль] *и.* Кәрәсин менән эшләгән (шәм һ. б.) приборҙарҙа яндырыу өсөн хеҙмәт иткән таҫма, бәй һымаҡ нәмә. *Шәм милтәһе. Примус милтәһе. Милтә яһау.*

**МИЛӘҮШӘ** [*фарс.*] *и.* **1.** Ҡыҫҡа һабаҡлы, ялтыр яҫы япраҡлы, күрән, һирәкләп аҡ йәки төрлө төҫтәге сәскәле үҫемлек. *Ала миләүшә. Алтай миләүшәһе.* ■ *Уйсанланып башын түбән эйер сәскәләргә сумған миләүшә.* Х. Ҡунаҡбай.

**2. Миләүшәләр, миләүшә һымаҡтар** *бот.* Төрлө миләүшәләрҙе үҙ эсенә алған үҫемлектәр ғаиләһенең дөйөм атамаһы.

**3.** (*баш хәреф менән*) Ҡатын-ҡыҙ исеме.

**МИЛӘШ** *и.* **1.** Гөлйемеш сәскәлеләр ғаиләһенә ҡараған абаға япраҡлы һарғылт ҡыҙыл төҫтәге эскелтем емешле ағас; мышар. *Балан, миләш ағастарының ап-аҡ сәскәләре күптән ҡойолоп, улар урынына, ҡыйбатлы мәрйен кеүек, ҡып-ҡыҙыл емештәре тәлгәшләнгән.* Н. Ҡәрип.

**2.** Шул ағастың емеше. *Миләш вареньеһы.*

**МИЛӘШЛЕК** *и.* Миләш күп үҫкән урын. *Яҡындағы миләшлек. Миләшлеккә барыу.*

**МИЛӘШЛӘНЕҮ** *ҡ.* Сәскәһе ҡойолоп, миләшкә тумалыу. *Миләшләнеү осоро.*

**МИМЕЙ** *и. бал.* Имсәк. *Мимей биреү.*

**МИ́МИКА** [*рус.* ⟨ *гр.*] *и.* **1.** Биттең, йөҙҙөң эске тойғоларҙы сағылдырған хәрәкәте. *Мимика менән һөйләү.*

**2.** Шундай хәрәкәттәр менән эске тойғоно күрһәтеү оҫталығы. *Дирижёрҙың ҡул хәрәкәттәре, мимикаһы музыканттарға асыҡ, аңлайышлы.* «Ағиҙел», 1968, № 3.

**МИМИКРИ́Я** [*рус.* ⟨ *ингл.*] *и. биол.* Ҡайһы бер йәнлек һәм үҫемлектәрҙең төҫө йәки рәүеше менән башҡа йәнлек һәм үҫемлектәргә йәки тирәләге тәбиғи нәмәләргә оҡшауынан ғибәрәт булған һаҡланыу сараһы.

**МИМО́ЗА** [*рус.* ⟨ *гр.*] *и.* **1.** Бер нәмә тейгәндә япрағын төрә торған тропик үҫемлек (ағас, ҡыуаҡ, лиана).

**2.** Хуш еҫле, ваҡ ҡына йомшаҡ һары сәскәле, мәңге йәшел субтропик акация төрө. *Мимозаның һары сәскәһенән хушбуй саңы аңҡып бөркөлдө, япраҡтары төнгә һарылды, ярәтышкан дуҫтар шикелле.* С. Ҡудаш.

**МИМЫЛДАТЫУ** *ҡ.* Төрлө яҡҡа йөрөтөп уйнаҡлатыу (һимеҙ тәнде, ауыҙ-морондо). *Тыпыр-тыпыр трат-та-та.. Мимылдатып ваҡ баҫа Эш һуңында күңел асыу, вәт килешә, исмаһам!* Т. Йәнәби.

**МИМЫЛДАУ** *ҡ.* Төрлө яҡҡа йөрөп, уйнаҡлап тороу (ауыҙ — моронға, итләс тәнгә ҡарата). *[Баттал] Ғәлимәнең тулы беләктәренә, мимылдап торған тулы күкрәгенә ялмап ҡарай.* А. Таһиров. *Фәнистең күҙ алдына ауыҙҙары мимылдап торған бәләкәс теремек һеңлеһе килеп баҫты.* Р. Низамов.

**МИН (минең, миңә, мине, минән, миндә)** *зат а.* **1.** Һөйләүсе үҙен күрһәткәндә, үҙен атағанда ҡулланыла. *[Сәғиҙә:] Мин был диаграммаларҙы дәрестә күргәҙмә материал итеп файҙаланам.* М. Тажи. *[Ныязғол:] Минең уға калған көнөм юҡ әле. Әйҙә үҙе яҡшы булһа, минән эш ҡалмаҫ.* Һ. Дәүләтшина.

**2.** Шәхес булараҡ үҙеңде атағанда һәм философик төшөнсә булараҡ субъектты белдергәндә ҡулланыла. *Уңыштарҙы һанағанда, «мин» дән башлай ул һүҙҙе. Кәмселекте фашлағанда эшкә ҡуша гел «һеҙ» ҙе.* М. Басыров.

◆ **Мин кем (*йәки* үҙем)** үҙен бик шәпкә һанап йөрөгән кешегә ҡарата әйтелә. *Бөтә байлыҡтың дүрттән берен биләп, мин кем тип яткан Зариф байҙарҙың һырт һөйәген һындырып, колхоз төҙөнөк.* И. Ғиззәтуллин. **Мин — мин икән, мин кем икән** *ҡар.* **мин кем.** *Мин — мин икән, мин кем икән тип, тирә-яҡтағыларға баш аша ғына ҡарап, һауаланып йөрөй торған кешенең бер нисә сәғәт эсендә шулай ныҡ үҙгәреүе Зиннәтуллаға бик сәйер тойолдо.* Ф. Әсәнов. **Мин әйтәм** кем менәндер икәү-ара булған хәбәрҙе башҡа кешегә һөйләгәндә ҡыҫтырыла торған инеш һөйләм. *[Ғариф:] Ашыҡмай тор, мин әйтәм, тәүҙә аҡыл үҫтер.* Б. Бикбай. **Минән киткәнсе, эйәһенә еткәнсе** берәй эште урынына еткереп эшләмәгән кешегә ҡарата әйтелә. **Миңә ҡалһа** үҙ фекереңде әйткәндә ҡулланыла. *Миңә ҡалһа, мин ҡуш ҡуллап риза.* **Миңә тимәгәйе** әһәмиәте юҡ, барыбер, тигән мәғәнәлә, кире мөнәсәбәтте белдерә. *Уларға эш булһа булды, аръяғы миңә тимәгәйе сәсрәп китһен.* **Ағай (*йәки* атай, апай) оло мин ҙур** оло кешегә хөрмәт күрһәтеү йәки юл биреү урынына үҙе алға сыҡҡан кешегә ҡарата әйтелә. **Һин дә мин** *ҡар.* **һин.**

**МИ́НА** [*рус.* ⟨ *фр.*] *и.* **1.** Һыуға йәки ергә ҡуйыла торған шартлатҡыс матдәле снаряд. *Аҫмалы мина. Йөҙгөс мина. Танк минаһы. Мина алыу. Мина ҡуйыу. Мина эҙләү. // Мина эҙләгес.* **Мина картәһе** дошман юлына миналар ҡуйып яһаған ҡаршылыҡ.

**2.** Минометтан ата торған шартлағыс снаряд. *Ярсыҡлы мина.* ■ *Яр өҫтөндә бер нисә миномёт тауышы ишетелде, ул арала булмай, унлаған мина бер-бер артлы һыҙғырышып, башҡорттарҙың баш тәңгәленән генә үтеп китте.* Ә. Ихсан.

**МИНАЛАНЫУ** *ҡ. төш. ҡар.* **миналау.** *Дошман килер юлдар миналанды, тимерсыбыҡ үткәрелде.* С. Әлибаев.

**МИНАЛАТЫУ** *ҡ. йөкм. ҡар.* **миналау.**

**МИНАЛАУ** *ҡ.* Мина һалыу, мина ҡуйыу. *Миналап сығыу. Юлды миналау.*

**МИНАЛАУСЫ** *и. ҡар.* **минасы.**

**МИНАЛЫ** *с.* Мина ҡуйылған. *Миналы ялан.*

**МИНАСЫ** *и.* **1.** Урын-ерҙе йәки ниндәйҙер объектты миналау һәм минаһыҙлау, шулай уҡ дошман ныҡытмаларын шартлатыу өсөн ер аҫтынан ҡаҙып инеү эштәре менән шөғөлләнгән белгес; минёр. *Минасылар төркөмө.* ■ *Командир алдан юл әрсеп барған минасылар .. менән бергә атланы.* Ә. Ихсан.

**2.** Карапта мина ҡоралдары менән эш иткән белгес.

**МИНАҺЫҘЛАУ** *ҡ.* Миналы урындарҙы минанан таҙартыу. *Яланды минаһыҙлау.*

**МИНДА́ЛЬ** [*рус.* ⟨ *гр.*] *и.* **1.** Гөлйемеш сәскәлеләр ғаиләһенә ҡараған тал япраҡлы сәтләүек

һымаҡ емешле көньяҡ ағасы. *Миндаль ағасы.*

**2.** Шул ағастың емеше. *Миндаль майы. Миндаль сәтләүеге. Миндаль һөтө.*

**МИНДЕК** *и.* Сабыныу өсөн бәйләнгән ҡайын япрағы; япраҡ. *Миндек бәйләү. Миндек бешереү. Миндек менән сабыныу.*

**МИНДЕКЛӘҮ** *к.* Миндек йәки миндек һымаҡ итеү. *Миндекләп бәйләү.*

**МИНЕКЕ** *эйл. а.* **1.** Теге йәки был нәмәнең беренсе зат исеменән һөйләүсегә ҡарағанын белдерә. *Китап минеке.* ■ *[Айҙар:] Ҡыҙ минеке, кемгә бирһәм дә, күпме мәһәр алһам да, үҙ ҡулымда.* Һ. Дәүләтшина.

**2.** *и. мәғ. һөйл.* Ир-ҡатыны, ҡатын ире тураһында. *Минеке өйҙә юҡ. // күпл.* Һөйләүсе кешенең ғаиләһе. *Минекеләргә сәләм әйт.*

**МИНЕҢСӘ** *р.* **1.** Мин әйткәнсә, мин уйлағанса. *Мин үҙем һәр бер тәртипкә буйһонам, тик һәр бер тәртиптең минеңсә булыуы ғына кәрәк.* Ғ. Хәйри.

**2.** Мин ҡушҡанса, мин өйрәткәнсә. *Минеңсә эшлә. Минеңсә уҡы. Минеңсә йырла.*

**3.** *инш. мәғ.* Һөйләүсенең үҙ фекеренә, үҙ тәжрибәһенә таянып һөйләүен белдерә. *[Ғәләү:] Минеңсә, бына иптәш Мырҙабаева бригадаһынан башлау яҡшыраҡ булыр.* Б. Бикбай.

**МИНЁР** *[рус. ⟨фр.] и. ҡар.* **минасы.**

**МИНЕРА́Л** *[рус. ⟨фр.] и.* Тау тоҡомо, руда, метеорит эсенә инеп химик составы һәм физик үҙенсәлеге менән бер төрлөрәк булған тәбиғи есем.

**МИНЕРАЛЛАНЫУ** *к.* Минераль тоҙҙарға туйыныу.

**МИНЕРАЛЛАШЫУ** *к.* Минералға әүерелеү (органик матдәләргә ҡарата).

**МИНЕРАЛО́Г** *и.* [*рус.*] *и.* Минералогия буйынса белгес.

**МИНЕРАЛОГИК** *с.* Минералогияға мөнәсәбәтле. *Минералогик өлгөләр.*

**МИНЕРАЛО́ГИЯ** [*рус.* ⟨*фр.*] *и.* Минералдар тураһындағы фән. *Минералогия музейы.*

**МИНЕРАЛЬ** [*рус.* минеральный] *с.* Минералдан торған. *Минераль матдә.* / Составында минералдар булған, минераллы. *Минераль ашлама. Минераль һыуҙар.* ■ *Башҡортостанда минераль һыу, боҫ, газ һәм мәте сығып ятҡан илленән артыҡ урын билдәле.* М. Хисмәтов.

**МИНИАТЮР** [*рус.* миниатюрный] *с.* **1.** Миниатюраға (1, 2 мәғ.) мөнәсәбәте булған. *Миниатюр картиналар. Миниатюр хәреф.*

**2.** Бик бәләкәй. *Миниатюр һүрәт.* / Бәләкәй һәм нәфис. *Миниатюр кәүҙә.*

**МИНИАТЮ́РА** [*рус.* ⟨*ит.*] *и.* **1.** Боронғо ҡулъяҙма китап биттәрендә эстәлекте иллюстрациялау йәки ҡулъяҙманы биҙәү өсөн буяп эшләнгән бәләкәй һүрәт йәки баш хәреф.

**2.** Оҫта һәм нәфис эшләнгән бәләкәй генә картина йәки сәнғәте.

**3.** Бик бәләкәй күләмле әҙәби йәки музыкаль әҫәр. *Шуберт миниатюралары. Чехов миниатюралары.*

**МИНИАТЮРСЫ** *и.* **1.** Миниатюралар яһаған рәссам.

**2.** Миниатюралар авторы.

**МИНИМАЛЬ** [*рус.* минимальный] *с.* Сағыштырмаса иң бәләкәй, иң әҙ; *киреһе* максималь. *Минималь талап. Минималь алыҫлыҡ.*

**МИ́НИМУМ** [*рус.* ⟨ *лат.*] *и.* **1.** Талап ителгән иң бәләкәй күләм; *киреһе* максимум. *Тейешле эштең минимумы. Минимумға ҡыҫҡартыу* (кәметеү).

**2.** Ниндәйҙер бер өлкәлә эшләү өсөн кәрәк һаналған белем һәм сараларҙың йыйылмаһы. *Агротехник минимум. Кандидатлыҡ минимумы. Технологик минимум. // Минимум хеҙмәт көнө. Минимум эш хаҡы.*

♦ **Көнкүреш минимумы** көнкүрешкә тәьмин итерлек иң әҙ аҡса.

**МИНИСТЕ́РСТВО** [*рус.*] *и. ҡар.* **министрлыҡ.**

**МИНИ́СТР** [*рус.* ⟨ *фр.*] *и.* Министрлыҡтың (1 мәғ.) башында торған хөкүмәт ағзаһы. *Ауыл хужалығы министры. Юстиция министры.*

**МИНИСТРЛЫҠ** *и.* **1.** Дәүләт идараһының хужалыҡтың йәки идаралыҡтың айырым бер тармағы менән етәкселек иткән үҙәк органы. *Һаулыҡ һаҡлау министрлығы.*

**2.** Буржуаз парламентаризм системаһында шул хөкүмәттең министрҙар составы.

**3.** *һөйл.* Министр вазифаһы; министр хеҙмәте. *Министрлыҡҡа һайлау.*

**МИНЛЕК** *и.* Кешемен тигән ғорурлыҡ. *[Йәнтимер] төрлө яҡлап иҙергә, минең минлегемде аяҡ аҫтына һалып тапарға тырыш[а].* С. Агиш.

**МИН-МИНЛЕК** *и.* Кешенең үҙ-үҙен ҙурға, шәпкә ҡуйыуы; маһайыусанлыҡ, тәкәбберлек, һауалылыҡ. *[Әнисә:] — Һин һуғышыу менән өслө алыуҙы ғына насар ҡылыҡ тип беләһеңме ни? Ә тупаҫлыҡ, мин-минлек, эш һөймәү? Быларҙан да насарыраҡ ғәҙәт бармы?* Р. Ғабдрахманов.

**МИН-МИНЛЕКЛЕ** *с.* Үҙ-үҙен ҙурға, шәпкә ҡуйыусан, үҙен генә уйлаусан; маһайыусан. *Донъяла .. мин-минлекле кеше менән бергә тороп, тереклек итеү ҡәҙәр ауыр эш бик әҙ була.* М. Ғафури.

**МИН-МИНЛӘНЕҮ** *к.* Үҙеңде ҙурға, шәпкә ҡуйыу; үҙеңде башҡаларҙан өҫтөн һанау; маһайыу, тәкәбберләнеү. *Мин-минләнеп йөрөү.*

**МИННӘТ** [*ғәр.*] *иҫк. и.* **1.** Кешегә күрһәткән яҡшылыҡ; изгелек. / Яҡшылыҡҡа ҡаршы эшләнгән яҡшылыҡ, кешенең яҡшылығы ҡарата рәхмәт тойғоһо.

**2.** Күрһәткән яҡшылығыңды кешенең иҫенә төшөрөп, төртөп әйткән һүҙ. *Булдыҡһыҙ яуыҙдарға юлдаш булһаң, әҙ генә нәмәһенә ҡылыр миннәт.* М. Ғафури.

□ **Миннәт итеү** (*йәки* **ҡылыу**) яҡшылыҡ эшләү.

● *Еймә кеше миннәтен, ей ҡулыңдың хеҙмәтен.* Әйтем. *Миннәт менән коймаҡ ашауҙан, миннәтһеҙ таяҡ ашау яҡшыраҡ.* Әйтем.

**МИННӘТСЕЛ** *с. иҫк.* Ҡылған яҡшылығына яҡшылыҡ көтөүсән. *Миннәтсел кеше.*

**МИНОМЁТ** [*рус.*] *и.* Шыма көбәкле ултыртмалы туп. *Миномёт взводы. Миномёттан атыу.*

**МИНОМЁТСЫ** *и.* Миномёт ғәскәрендә хеҙмәт иткән хәрби кеше; миномёттан атыусы. *Дошман беҙҙең һуғышсыларҙы Днепрға кире төшөрөп батырыу өсөн ун тапҡыр атакаға күтәрелеп ка-*

*раһа ла, кыйыу миномётсылар уларҙы .. үткәрмәне.* Ә. Ихсан.

**МИНОНОС** [*рус.* миноносец] *и.* 19 быуаттың икенсе яртыһында һәм 20 быуат башындағы торпедалар менән ҡоралланған хәрби карап.

**МИНО́Р** [*рус.* 〈 *фр.*] *и. муз.* Бәләкәй терцияға ҡоролоп, моңло бер көй хасил иткән берҙәм тауыштар теҙеме; *киреһе* мажор.

**МИНОРЛЫ** *с.* Минор тауыш теҙмәһенә нигеҙләнгән. *Минорлы аккорд. Минорлы гамма.*

**МИ́НУС** [*рус.* 〈 *лат.*] *и. мат.* **1.** Алыу ғәмәлен йәки кире дәүмәлде күрһәтә торған тамға [—]; *киреһе* плюс.

**2.** Ике һан араһында икенсеһенең тәүгеһенән алынғанын күрһәтер өсөн ҡулланыла. *Биш минус өс.*

**3.** Математикала: кире һан. / Һауа температураһының нулдән түбән булыуын белдергән тамға. *Минус 20 градус.*

**4.** Уҡыусының белем һәм тәртип кимәлен баһалағанда тейешле баһанан ҡайтышыраҡ булыуын күрһәтә. *Минус биш ҡуйыу.*

**5.** *күсм. һөйл.* Берәй кешеләге, эштәге тиҫкәре яҡ; кәмселек. *Эштәге минустарҙы бөтөрөү.*

**МИНУТ** [*рус.* минута 〈 *лат.*] *и.* **1.** Сәғәттең алтмыштан бер өлөшөнә тигеҙ булған ваҡыт берәмеге; 60 секунд. *Бер нисә минут. Минут һайын.*

**2.** Бик ҡыҫҡа ваҡыт. *Бер минут эсендә. Буш минутта.* ■ *Бер минутта ташты күңелем, бер минутта булды ут, берсә янды, берсә туңды, барыһы булды бер минут.* Ш. Бабич.

**3.** Билдәле бер ваҡыт, саҡ. *Күңелле минуттар.* ■ *Бөгөндә лә суйыр ташы менән тулҡын итәгенә таянып, Чапаевтың йөҙгән минуттарын хәтерләйҙәр Урал ярҙары..* Р. Ниғмәти.

**4.** *махс.* Мөйөш һәм дуғаны үлсәү берәмеге (градустың 1/60 өлөшөнә тиң)

◆ **Теләгән** (*йәки* **һәр**) **минут** һәр мәл. **Минуты — сәғәте менән** шунда уҡ, бик тиҙ арала.

**МИНУТЛАП** *р.* **1.** Минут иҫәбенән сығып. *Минутлап һанау. Минутлап көтөү.*

**2.** Минут самаһы, минут тирәһе. *Егерме биш минутлап ваҡыт үтте.* ■ *Дәрес башланырға бары ун биш минутлап ҡына ваҡыт ҡалды, ә беҙ әле һаман Хәмиттең сумкаһын эҙләйбеҙ.* С. Агиш.

**МИНУТЛЫ** *с.* Минут эсендә башҡарыла торған. *Минутлы эш. Минутлы осрашыу.*

**МИНУТЛЫҠ** [1] *с.* Бер минутҡа иҫәпле. *Минутлыҡ тәнәфес.* / Бик ҡыҫҡа ваҡытлы. *Минутлыҡ эш.*

**МИНУТЛЫҠ** [2] *и.* Сәғәттең минут иҫәбен күрһәтә торған теле. *Сәғәттең минутлығы биштә тора.*

**МИНУТЫНДА** *р.* Шул уҡ мәлдә, бик ҡыҫҡа ваҡыт эсендә. *Минутында ғына эшләп булмай.*

**МИҢ** *и.* Тәндәге тыумыштан булған тап йәки төйөрсөк. *Ҡара миң. Ҡыҙыл миң.* ■ *Һылыубикә, һылыу туташ, ҡыҙ солтаны, бит уртаңда ҡара миң бар — бит сулпаны.* Ш. Бабич. *Миңлебайҙың ҡолаҡ һырғаһында борсаҡ хәтле генә ҡыҙыл миң бар. Боронғо ырым буйынса, миңе аҙмаһын өсөн, уны Миңлебай тип атағандар.* З. Биишева.

◆ **Миң булып ҡалыу** ныҡ урын алып, онотолмаҫлыҡ, бөтмәҫлек булып ҡалыу. *Һүҙе батырҙың миң булып ҡалды иленә.* «Ҡараһаҡал».

**МИҢГӘРЕЛЕҮ** *ҡ. төш. кар.* **миңгәреү.** *Бик ҙур эш миңгәрелде.*

**МИҢГӘРЕҮ** *ҡ.* Ҙур, ауыр эш-хәлдә еңеү, атҡарыу. *[Бабай:] Йылыраҡ сакта миңгәреп ҡалырға, ҡышка бик ныҡ әҙерләнергә кәрәк* А. Игебаев. *[Ҡарамырҙа:] Ай-һай, бик ҙур эш миңгәрҙең, бына күр инде күҙең менән.* Х. Ғәбитов.

**МИҢГӘТЕҮ** *ҡ. диал.* Киңгәтеү.

**МИҢГӘҮ** *ҡ. диал.* Киңгәү. *Ғарифулла ҡарт ауырыуҙан миңгәп йығылған.* Н. Мусин.

**МИҢЛЕ** *с.* Миңе булған. *Миңле ҡыҙ. Миңле булыу.*

**МИҢЛӘНЕҮ** *ҡ.* Миңле булыу. *Ҡуңыр һылыу, ҡыйғас ҡаш, әйәге-бите уйылған, һул битенең уртаһы күҙ ҡараһындай миңләнгән.* «Урал батыр».

**МИҢРӘТЕҮ** *ҡ.* Миңрәүгә әйләндереү, миңрәү итеү. *[Ғариф:] Юҡ менән башымды ҡатырмағыҙ, миңрәтмәгеҙ.* Ғ. Хәйри. *Бөркөү һауа тәнде әлһерәтә, башты миңрәтә.* В. Нафиков.

**МИҢРӘҮ** [1] *ҡ.* Ауыр тормоштан, ауырыуҙан, ҡаты ҡайғынан, иҫ, аҡыл томаланыу. *Гөлйөҙөмдөң төн йоҡоһо күрмәй миңрәгән башы был һораулара яуап бирә алмай.* Ф. Иҫәнғолов.

**МИҢРӘҮ** [2] *с.* **1.** Иҫ, аҡыл томаланып, фекер асыҡлығы юйылған; аңра. *Ләләнең бер ҙә төҫө юҡ, миңрәү һымағыраҡ булып киткән.* Б. Бикбай.

**2.** Тиҙ генә аңлап бармай торған; аңыш.

**МИҢРӘҮЛӘНЕҮ** *ҡ.* Миңрәүгә, аңраға әйләнеү. *Миңрәүләнеп ҡалыу.* ■ *Гәүһәрҙең маңлайына һалҡын тир бәреп сыҡты. Күҙ алдары ҡараңғыланып, башы әйләнеп китте лә, байтаҡ ваҡыт миңрәүләнеп ултырҙы.* И. Ғиззәтуллин.

**МИҢРӘҮЛӘТЕҮ** *ҡ.* Миңрәүгә, аңраға әйләндереү. *[Саматтың әсәһе:] Боҙҙолар баламды, .. миңрәүләттеләр. Йә инде, уҡымай белә торған бала «ике» алып ҡайта башланы.* К. Мәргән.

**МИОКА́РД** [*рус.* 〈 *гр.*] *и. анат.* Йөрәктең төп массаһын тәшкил иткән ит ҡатламы. *Миокард инфаркты.*

**МИОКАРДИ́Т** [*рус.*] *и. мед.* Йөрәк итенең, миокардтың сире.

**МИР** [1] [*рус.*] *и. һөйл.* Йәмәғәт, халыҡ, ил халҡы. *[Олоғатай:] Ҡарт көнөмдә битемә ҡара яҡты, мир алдына рисуай итте бәдбәхет ҡыҙыҡай!* Н. Иҙелбай. **Мир балы** *диал.* туй өсөн күмәкләп ҡойған бал; күмәк бал.

**МИР** [2] *и. кар.* **әмир** 1.

**МИРАБЕ́ЛЬ** [*рус.* 〈 *фр.*] *и.* **1.** Емеш ағасы, сливаның бер төрө; ваҡ һары слива. *Мирабель ағасы.*

**2.** Шул ағастың емеше. *Мирабель вареньеһы.*

**МИРАБИЛИ́Т** [*рус.* 〈 *лат.*] *и. мин.* Аҡ төҫтәге кристаллик минерал; глаубер тоҙо (медицинала, быяла һәм химия промышленносында ҡулланыла).

**МИРА́Ж** [*рус.* 〈 *фр.*] *и.* **1.** *кар.* **һағым.**

**2.** *күсм.* Ерлекһеҙ хыял. *Миражларға сумыу.*

**МИРАҪ** [*ғәр.*] *и.* **1.** Үлгән кешенән кемдеңдер ҡарамағына күскән мал-мөлкәт, байлыҡ. *Мираҫ алыу. Мираҫ биреү. Мираҫ итеп ҡалдырыу.*

*раһа ла, кыйыу миномётсылар уларҙы .. үткәрмәне.* Ә. Ихсан.

**МИНОНОС** [*рус.* миноносец] *и.* 19 быуаттың икенсе яртыһында һәм 20 быуат башындағы торпедалар менән коралланған хәрби карап.

**МИНО́Р** [*рус.* ⟨ *фр.*] *и. муз.* Бәләкәй терцияға короолоп, моңло бер көй хасил иткән берҙәм тауыштар теҙеме; *киреһе* мажор.

**МИНОРЛЫ** *с.* Минор тауыш теҙмәһенә нигеҙләнгән. *Минорлы аккорд. Минорлы гамма.*

**МИ́НУС** [*рус.* ⟨ *лат.*] *и. мат.* **1.** Алыу ғәмәлен йәки кире дәүмәлде күрһәтә торған тамға [—]; *киреһе* плюс.

**2.** Ике һан араһында икенсеһенең тәүгеһенән алынғанын күрһәтер өсөн кулланыла. *Биш минус өс.*

**3.** Математикала: кире һан. / Һауа температураһының нулдән түбән булыуын белдергән тамға. *Минус 20 градус.*

**4.** Уҡыусының белем һәм тәртип кимәлен баһалағанда тейешле баһанан кайтышыраҡ булыуын күрһәтә. *Минус биш куйыу.*

**5.** *күсм. һөйл.* Берәй кешеләге, эштәге тиҫкәре яҡ; кәмселек. *Эштәге минустарҙы бөтөрөү.*

**МИНУТ** [*рус.* минута ⟨ *лат.*] *и.* **1.** Сәғәттең алтмыштан бер өлөшөнә тигеҙ булған ваҡыт берәмеге; 60 секунд. *Бер нисә минут. Минут һайын.*

**2.** Бик ҡыҫҡа ваҡыт. *Бер минут эсендә. Буш минутта.* ■ *Бер минутта ташты күңелем, бер минутта булды ут, берсә янды, берсә туңды, барыһы булды бер минут.* Ш. Бабич.

**3.** Билдәле бер ваҡыт, саҡ. *Күңелле минуттар.* ■ *Бөгөндә лә суйыр ташы менән тулкын итәгенә таяныл, Чапаевтың йөҙгән минуттарын хәтерләйҙәр Урал ярҙары..* Р. Ниғмәти.

**4.** *махс.* Мөйөш һәм дуғаны үлсәү берәмеге (градустың 1/60 өлөшөнә тиң)

◆ **Теләгән (***йәки* **һәр) минут** һәр мәл. **Минуты — сәғәте менән** шунда уҡ, бик тиҙ арала.

**МИНУТЛАП** *р.* **1.** Минут иҫәбенән сығып. *Минутлап һанау. Минутлап көтөү.*

**2.** Минут самаһы, минут тирәһе. *Егерме биш минутлап ваҡыт үтте.* ■ *Дәрес башланырға бары ун биш минутлап кына ваҡыт калды, ә беҙ әле һаман Хәмиттең сумкаһын эҙләйбеҙ.* С. Агиш.

**МИНУТЛЫ** *с.* Минут эсендә башкарыла торған. *Минутлы эш. Минутлы осрашыу.*

**МИНУТЛЫҠ** [1] *с.* Бер минутка иҫәпле. *Минутлыҡ тәнәфес.* / Бик ҡыҫҡа ваҡытлы. *Минутлыҡ эш.*

**МИНУТЛЫҠ** [2] *и.* Сәғәттең минут иҫәбен күрһәтә торған теле. *Сәғәттең минутлығы биштә тора.*

**МИНУТЫНДА** *р.* Шул уҡ мәлдә, бик ҡыҫҡа ваҡыт эсендә. *Минутында ғына эшләп булмай.*

**МИҢ** *и.* Тәндәге тыумыштан булған тап йәки төйөрсөк. *Ҡара миң. Ҡыҙыл миң.* ■ *Һылыубикә, һылыу туташ, кыҙ солтаны, бит уртаңда кара миң бар — бит сулпаны.* Ш. Бабич. *Миңлебайҙың колаҡ һырғаһында борсаҡ хәтле генә кыҙыл миң бар. Боронғо ырым буйынса, миңе аҙмаһын өсөн, уны Миңлебай тип атағандар.* З. Биишева.

◆ **Миң булып калыу** нык урын алып, онотолмаҫлыҡ, бөтмәҫлек булып ҡалыу. *Һүҙе батырҙың миң булып калды иленә.* «Ҡараһаҡал».

**МИҢГӘРЕЛЕҮ** *к. төш. кар.* **миңгәреү.** *Бик ҙур эш миңгәрелде.*

**МИҢГӘРЕҮ** *к.* Ҙур, ауыр эш-хәлдә еңеү, атҡарыу. *[Бабай:] Йылыраҡ сакта миңгәреп калырға, кышка бик нык әҙерләнергә кәрәк* А. Игебаев. *[Карамырҙа:] Ай-һай, бик ҙур эш миңгәрҙең, бына күр инде күҙең менән.* Х. Ғәбитов.

**МИҢГӘТЕҮ** *к. диал.* Киңгәтеү.

**МИҢГӘҮ** *к. диал.* Киңгәү. *Ғарифулла карт ауырыуҙан миңгәп йығылған.* Н. Мусин.

**МИҢЛЕ** *с.* Миңе булған. *Миңле кыҙ. Миңле булыу.*

**МИҢЛӘНЕҮ** *к.* Миңле булыу. *Ҡуңыр һылыу, кыйғас каш, әйәге-бите уйылған, һул битенең уртаһы күҙ караһындай миңләнгән.* «Урал батыр».

**МИҢРӘТЕҮ** *к.* Миңрәүгә әйләндереү, миңрәү итеү. *[Ғариф:] Юҡ менән башымды ҡатырмағыҙ, миңрәтмәгеҙ.* Ғ. Хәйри. *Бөркөү һауа тәнде әлһерәтә, башты миңрәтә.* В. Нафиков.

**МИҢРӘҮ** [1] *к.* Ауыр тормоштан, ауырыуҙан, ҡаты ҡайғынан, иҫ, аҡыл томаланыу. *Гөлйөҙөмдөң төн йокоһо күрмәй миңрәгән башы был һорауға яуап бирә алмай.* Ф. Иҫәнғолов.

**МИҢРӘҮ** [2] *с.* **1.** Иҫ, аҡыл томаланып, фекер асыҡлығы юйылған; аңра. *Ләләнең бер ҙә төҫө юҡ, миңрәү һымағыраҡ булып киткән.* Б. Бикбай.

**2.** Тиҙ генә аңлап бармай торған; аңыш.

**МИҢРӘҮЛӘНЕҮ** *к.* Миңрәүгә, аңраға әйләнеү. *Миңрәүләнеп калыу.* ■ *Гәүһәрҙең маңлайына һалкын тир бәреп сыкты. Күҙ алдары карaңғыланып, башы әйләнеп китте лә, байтаҡ ваҡыт миңрәүләнеп ултырҙы.* И. Ғиззәтуллин.

**МИҢРӘҮЛӘТЕҮ** *к.* Миңрәүгә, аңраға әйләндереү. *[Саматтың әсәһе:] Боҙҙолар баламды, .. миңрәүләттеләр. Йә инде, укымай белә торған бала «ике» алып кайта башланы.* К. Мәргән.

**МИОКА́РД** [*рус.* ⟨ *гр.*] *и. анат.* Йөрәктең төп массаһын тәшкил иткән ит катламы. *Миокард инфаркты.*

**МИОКАРДИ́Т** [*рус.*] *и. мед.* Йөрәк итенең, миокардтың сире.

**МИР** [1] [*рус.*] *и. һөйл.* Йәмәғәт, халыҡ, ил халҡы. *[Ологатай:] Ҡарт көнөмдә битемә кара яҡты, мир алдына рисуай итте бәдбәхет кыҙыкай!* Н. Иҙелбай. **Мир балы** *диал.* туй өсөн күмәкләп ҡойған бал; күмәк бал.

**МИР** [2] *и. кар.* **әмир** 1.

**МИРАБЕ́ЛЬ** [*рус.* ⟨ *фр.*] *и.* **1.** Емеш ағасы, сливаның, бер төрө; ваҡ һары слива. *Мирабель ағасы.*

**2.** Шул ағастың емеше. *Мирабель вареньеһы.*

**МИРАБИЛИ́Т** [*рус.* ⟨ *лат.*] *и. мин.* Аҡ төҫтәге кристаллик минерал; глаубер тоҙо (медицинала, быяла һәм химия промышленносында кулланыла).

**МИРА́Ж** [*рус.* ⟨ *фр.*] *и.* **1.** *кар.* **һағым.**

**2.** *күсм.* Ерлекһеҙ хыял. *Миражларға сумыу.*

**МИРАҪ** [*ғәр.*] *и.* **1.** Үлгән кешенән кемдеңдер карамағына күскән мал-мөлкәт, байлыҡ. *Мираҫ алыу. Мираҫ биреү. Мираҫ итеп калдырыу.*

■ *Йорт хужаһы Баһау менән Шаһиәхмәткә мираҫ бүлгәндә нисәшәр баш мал, нисәшәр баш ҡортло умарта тейгәнен бармағы менән һанап ултырҙы.* Ж. Кейекбаев. *Шәхси милекте мираҫ итеү закон менән рөхсәт ителә. Мираҫҡа ҡалған мөлкәт вариҫтарға бирелергә тейеш.* Т. Хәкимов.

**2.** Үткән быуындарҙан ҡалған сәнғәт, әҙәбиәт, культура байлығы; ҡомартҡы. *Әҙәби мираҫҡа ҡарай торған әҫәрҙәрҙе уртаға һалып, унда нимәнең файҙалы, нимәнең зарарлы булыуын объектив рәүештә айырып алыу — бөгөнгө фәндең мөһим бурысы.* К. Әхмәтйәнов. *Башҡорт халҡының ифрат бай һәм гүзәл йыр мираҫы бар. Борон-борондан был мираҫ халҡыбыҙҙың ҡыуанысы һәм йыуанысы булған.* С. Галин.

**3.** (*баш хәреф менән*) Ир-ат исеме.

**МИРАҪЛАУ** *к.* Мираҫ итеп ҡалдырыу, мираҫ итеү. *Мостафа бай байлығын Асанбайға түгел, ә кесе улына мираҫларға уйлай.* И. Кинйәбулатов.

**МИРАҪЛЫҠ** *и. ҡар.* **нәҫелсәнлек.**

**МИРЕКӘЙ** *и. диал.* Быума.

**МИРЗА** [*фарс.*] *и. тар. ҡар.* **мырҙа** 1, 2.

**МИРЗАЛЫҠ** *и.* Мирза дәрәжәһе.

**МИРТ** [*рус.* ⟨ *гр.*] *и.* **1.** Хуш еҫле аҡ сәскә ата торған мәңге йәшел көньяҡ ағасы йәки ҡыуағы.

**2. Мирттар, мирт һымаҡтар** *бот.* Мәңге йәшел ағастар ғаиләһенең дөйөм исеме (мирт, эвкалипт, баҙыян ағасы инә).

**МИРШӘ** [*рус.* верша] *и. диал.* Ҙур мурҙа.

**МИРӘЙЕТ** [*рус.* мироед] *и. һөйл.* Илде иҙеп, халыҡты имеп байыған кеше. *Волоска старшина һайлауға бер йыл ҡалды тигәс тә, ул үҙенең бөтә политикаһын, оҫталығын юлға һалып, байлығын йәлләмәй, һигеҙ ауылдан йыйыласаҡ һайлаусы кешеләрҙе, мирәйеттәрҙе үҙ яғына ауҙарырға тырышты.* Һ. Дәүләтшина.

**МИС** *и. этн.* Тотошлай туналған кәзә тиреһенең аяҡ-ҡул урынын бәйләп, муйын урынын ауыҙ итеп, эсен ыҫлап яһаған ҡымыҙ һауыты (ҡымыҙҙы юлда йөрөтөү өсөн).

**МИСЕК** [*гәр.*] *и.* Ҡайһы бер хайуандарҙың биҙҙәре тарафынан эшләп сығарылған, шулай уҡ, ҡайһы бер үҫемлектәрҙең тамырында йәки орлоғонда булған хуш еҫле матдә. / *иҫк.* Составына шундай матдә ҡушылған хушбый. *Нисек үҫкән [сәскә] ғәжәп матур, үҙендә төрлө төҫтәр бар; ғүйә мисек кеүек аңҡыр, үҙендә төрлө еҫтәр бар.* М. Ғафури.

**МИСЕК-ҒӘМБӘР** *и. йыйн.* Хуш еҫле матдәләр. *Мисек-ғәмбәр менән мисәтләнгән шешәләр, шуларҙағы төрлө шараптарҙы ожмах әһелдәре эсәләр.* М. Ғафури.

**МИСКӘ** [*рус.* бочка] *и.* Ике башын төпләп, ҡабырғаһынан ауыҙ уйып яһаған йомро һауыт (төрлө шыйыҡ нәмә өсөн). *Агас мискә.*

◆ **Араҡы мискәһе** араҡы эсергә яратҡан кеше; эскесе.

**МИСКӘЛЕ** *с.* Мискәгә һалынған. *Мискәле һыра. Мискәле кәбеҫтә.*

**МИСКӘЛӘП** *р.* Мискә иҫәбенән сығып, мискә-мискә итеп. *Ғариф ҡарт колхоз фермаһына мискәләп һыу ташый.* Б. Бикбай.

**МИСКӘСЕ** *и.* Мискә яһаусы.

**МИСРАҒ** [*гәр.*] *и. кит.* Шиғырҙың тулы фекер биргән өлөшө. *«Ирҙәрҙең маҡсаты булмаҡ талапта», тигән мисрағ тура килмәҫ китапта.* М. Ғафури. / Шиғыр строфаһы; куплет. *Абруй ханым Сәгит Рәмиевтың «Күлмәк йыры» исемле шиғырынан мисрағтарын йырлағанда ҡайһы бер ҡартыраҡ һалдаттарҙың күҙ йәштәре һығылып-һығылып сыға ине.* Ш. Хоҙайбирҙин.

**МИСС** [*рус.* ⟨ *ингл.*] *и.* **1.** Англияла һәм Американа кейәүгә сыҡмаған ҡатын-ҡыҙҙың исеме йәки фамилияһы алдынан әйтелә торған һүҙ.

**2.** Революцияға тиклемге Россияла буржуаз дворяндар ғаиләһендә гувернантка-тәрбиәсе инглиз ҡатын-ҡыҙы.

**МИССИОНЕ́Р** [*рус.* ⟨ *фр.*] *и.* Башҡа диндәге халыҡтар араһына үҙ динен таратыу өсөн ебәрелгән кеше. *Башҡортостанға ислам X—XII быуаттарҙа инә башлай. Уны таратыуҙа бигерәк тә Урта Азия һәм Болгар миссионерҙары тырышлыҡ күрһәтәләр.* Ә. Харисов.

**МИССИОНЕРЛЫҠ** *и.* Миссионер эшмәкәрлеге.

**МИ́ССИС** [*рус.* ⟨ *ингл.*] *и.* Англия һәм Американа кейәүҙәге ҡатын-ҡыҙ исеме йәки фамилияһы алдынан әйтелә торған һүҙ.

**МИ́ССИЯ** [*рус.* ⟨ *лат.*] *и.* **1.** Кемдеңдер өҫтөнә төшкән яуаплы эш. *Оло миссия. Миссияны үтәү.*

**2.** Кемдең йәки нимәнеңдер өҫтөнә төшкән яуаплы юғары бурыс. *Шағирҙың миссияһы. Сәнғәттең бөйөк миссияһы.*

**3.** Башында илсе йәки вәкил булған даими дипломатик вәкиллек һәм шул вәкиллек урынлашҡан бина.

**4.** Билдәле бер маҡсат менән сит илгә ебәрелгән вәкәләт. *Хәрби миссия. Сауҙа миссияһы.*

**МИСТАР** [*гәр.*] *и.* **1.** *иҫк.* Линейка.

**2.** Тура яҙыу өсөн аҡ ҡағыҙ аҫтына һалына торған ҡара һыҙыҡлы ҡағыҙ; транспарант.

**МИ́СТЕР** [*рус.* ⟨ *ингл.*] *и.* Англия һәм Американа ир кешенең исеме йәки фамилияһы алдынан әйтелә торған хөрмәтләү һүҙе; әфәнде.

**МИСТЕ́РИЯ** [*рус.* ⟨ *гр.*] *и.* **1.** Боронғо Греция, Рим һәм Көнсығыш илдәрендә: изге кешеләр генә ҡатнаша алған йола.

**2.** Урта быуат Көнбайыш Европаһында: библия сюжетына ҡоролған дини драма.

**МИ́СТИК** [*рус.*] *и.* Мистицизмға бирелгән, мистицизм яҡлы кеше.

**МИСТИ́К** *с.* Мистикаға һәм мистицизмға мөнәсәбәтле. *Мистик тәғлимәт.* / Мистика менән һуғарылған. *Мистик романтизм. Мистик ҡараш.* ■ *Зәки — мистик шағир, шулай булған хәлде лә, ул кешенең аҡыл көсөнә, ижад фекеренә ышана.* Ә. Харисов.

**МИ́СТИКА** [*рус.* ⟨ *гр.*] *и.* **1.** Тәбиғәттән тыштҡы фантастик көстөң булыуына, төрлө тылсым ярҙамында кешенең шул көстәр менән мөнәсәбәткә инә алыуына ышанған ҡараш. *Урта быуат мистикаһы.* ■ *Тормош яфаһынан тамам йонсоған мосолман дини мистикаға бирелеп, үҙ хыялында теге донъя рәхәтенә сумыр, әҙ генә булһа*

*ла үҙ-үҙен онотоп, фани донъя ғазаптарынан айырылып тороп булған.* Ә. Харисов.

**2.** *күсм. һөйл.* Аңлашылмаған серле нәмә.

**МИСТИФИКА́ЦИЯ** [*рус.* ⟨ *гр.*] *и. кит.* Кешене яҙлыҡтырыу, хата фекергә төшөрөү өсөн юрамал эшләнгән алдыҡ.

**МИСТИФИКАЦИЯЛАУ** *ҡ. кит.* Хата фекергә төшөрөү өсөн юрамал алдау.

**МИСТИЦИ́ЗМ** [*рус.*] *и. кит.* Мистикаға нигеҙләнгән дини идеалистик ҡараш һәм ысын булмышты аҡыл менән түгел, ә интуитив сара менән генә белеп була тип иҫәпләгән тәғлимәт. *Ғәҙел булмаған социаль тормоштоң асылына төшөнә алмаған бер ҡатлы кешене мистицизм үҙенә ҡараҡҡан, үҙ коло иткән.* Ә. Харисов.

**МИСҮӘК** [1] *и. иҫк.* Бер яҡ башынан әҙ генә ҡабығын һыҙырып, бумала һымаҡ итеп яһалған теш таҙартҡыс сыбыҡ (борон хаждан алып ҡайта торған булғандар). *Сыпсыҡ Һиҙиәт менән Кәкре Сәйет мисүәктәрен ташлап, тештәрен порошок менән таҙарта башлаған.* М. Ғафури.

**МИСҮӘК** [2] [*ғәр.*] *и.* Ҡатмарлы сәскәләләр ғаиләһенә ҡараған сәнскәк япраҡлы, ваҡ ҡына өлпө сәскәле, селеккә оҡшағаныраҡ күп йыллыҡ үлән. *Мисүәк сәскәһе.*

**МИСӘЛЕҮ** *ҡ. төш. ҡар.* **мисәү** [1].

**МИСӘТ** [*рус.* печать] *и.* **1.** Баҫҡанда яҙыуы йәки тамғаһы ҡала торған махсус нәмә һәм шул нәмәнән төшкән яҙыу йәки тамға (документты дөрөҫләү, нығытыу өсөн ҡулланыла); мөһөр. *Түңәрәк мисәт. Герблы мисәт. Мисәт һуғыу.* ■ *Хәсән аҡһаҡал халыҡтың фатихаһын ала ла, шәжәрәгә мисәт баҫтырып алып ҡайтыр өсөн шул көндө үк оҙон юлға сыға.* Ә. Вахитов. / *һөйл.* Нәмәнең атамаһы күрһәтелгән һүрәтле ҡағыҙ; этикетка. *Сәй мисәте.*

**2.** *күсм.* Ниндәй ҙә булһа хәл ваҡиғаның һаҡланған эҙе. *Аҙым һайын, уҡый белһәң, ҡанлы көрәш, яуҙар мисәте.* Р. Назаров.

**3.** Нығытып, ябып бикләнгән ҡапҡас йәки тығын. *Шешәнең мисәтен асыу.* / Тулы кәрәҙ өҫтөнә бал ҡорто һылап ҡуйған йоҡа ғына балауыҙ ҡаты. *Баллы кәрәҙҙең мисәтен ҡырып алыу өсөн электр йәки пар бысағы ҡулланыла.* «Совет Башҡортостаны», 1967, 9 апрель.

◆ **Мисәт баҫыу** 1) һүҙҙе ҡәтғи итеп әйтеү; кемдеңдер һүҙен дөрөҫләү, йөпләү. *[Шахныяз — Кәләмдиргә:] Нимәһе һин минең һүҙҙәргә мисәт баҫып тораһың.* Ә. Мирзаһитов; 2) ниндәйҙер хәлде нығытыу. *Мулла никах уҡып баҫа ине «уға» [ҡыҙға] мәңге коллоҡ мисәтен.* М. Ғафури. **Ҡара мисәт** *диал.* һуғыштан килгән үлем хәбәре; ҡара ҡағыҙ. *Берҙән-бер ағайымдың ҡара мисәте килгәненә йылдан артыҡ булды, ә әсәйем уны иҫәнән сығармай.* Н. Мусин. **Һурғыс мисәт** рәсми хат һ. б. конвертын нығытыу өсөн һурғыс ҡойоп баҫҡан мисәт.

**МИСӘТЛЕ** *с.* **1.** Мисәт (1 мәғ.) баҫылған. *Мисәтле ҡағыҙ.*

**2.** Мисәт һалып бикләнгән. *Мисәтле ишек.* / Бикләп, ҡаплап, нығытылған. *Мисәтле һауыт.* / Балауыҙ менән өҫтән һылаулы. *Мисәтле кәрәҙ.*

**МИСӘТЛӘНЕҮ** *ҡ. төш. ҡар.* **мисәтләү.** *Мисәтләнгән кәрәҙ.*

**МИСӘТЛӘҮ** *ҡ.* **1.** Мисәт (1 мәғ.) баҫыу (ҡағыҙға). *Документты мисәтләп биреү.* / *күсм.* Ҡәтғи итеп әйтеү; кемдеңдер һүҙен йөпләү.

**2.** Ниҙең дә булһа биген нығытып, пломба һалыу. *Келәтте мисәтләү. Пакетты мисәтләү. Һурғыс менән мисәтләү.* ■ *Тирмән янындағы ашлыҡ һалған амбарҙы мисәтләнеләр.* Ғ. Хәйри. / Ауыҙын ҡаплап, нығытыу. *Еҫле майҙың еҫе сыҡмай, әллә мисәтләгәнгә* (Халыҡ йырынан). / Тулы кәрәҙҙең өҫтөн йоҡа ғына балауыҙ менән һылау (бал ҡортона ҡарата). *Кәрәҙҙе мисәтләү.*

**МИСӘҮ** [1] *ҡ.* Төптәге атҡа тағы бер атты ҡушарлау. *Мисәп егеү.* ■ *Күрше председатель үтә юртаҡҡа юрға мисәп.* С. Кулибай. *Ағиҙелкәйҙәрҙе кисәйек, кисә алмаһаҡ, пар ат мисәйек* (Халыҡ йырынан).

**МИСӘҮ** [2] *и.* **1.** Төптәге атҡа тағы бер аттың ҡушарлап егелеүе. *Мисәүгә егеү. Мисәүҙәге ат.* ■ *Йөктөң ауырлығы төптәге атҡа төшә, мисәүҙәгеләре ҡупшы ғына, тәгәрмәскә тояҡтарын тейҙерә-тейҙерә генә юртып бара.* Р. Шәкүров. ..*Йөрөр сағығыҙҙа йүгерешеп, өйҙән-өйгә алып һөйөнсө, мисәүгә лә түгел, төпкә екте тормош һеҙҙе колон көйөнсә.* Р. Бикбаев. / Ошо рәүешле егелгән ат. *Мисәүҙе туғарып ҡуйыу.*

**2.** Ҡушарлап егеү өсөн хеҙмәт иткән бау. *Тәзенән мисәү яһап, [Мәхмүттең] атын шунда ектеләр.* С. Агиш.

**МИСӘҮЛЕ** *с.* Мисәүләп егелгән, мисәү аты егелгән. *Мисәүле арба. Мисәүле һуҡа.*

**МИСӘҮЛӘҮ** *ҡ.* Мисәүгә егеү; мисәү. *Мисәүләп егеү.*

**МИҪАЛ** [*ғәр.*] *и.* **1.** Кемдер өсөн үрнәк, өлгө булырлыҡ эш йәки күренеш. *Батырлыҡҡа миҫал.* ■ *Әбейгә бөтә ауыл менән өй күтәреп бирҙеләр. Бына яҡшылыҡҡа бер миҫал.* «Совет Башҡортостаны», 1980, 25 март.

**2.** Нимәгәләр тап килеп, һүҙҙе, фекерҙе асыҡларлыҡ йәки дөрөҫләрлек үрнәк. *Миҫалға алыу. Миҫал килтереү.* ■ *[Сәгиҙә:] Мин ошо диаграммаларға таянып, үҙебеҙҙең «Ҡыҙыл партизан» колхозы миҫалында эш күрәм, уҡытыу программаһын, дәресте урындағы материалға ҡулайлаштырам.* М. Тажи. *Бына мин үҙемдең тормоштан бер миҫал алып китәйем әле.* М. Тажи. / Нимә менәндер сағыштырып оҡшатҡанда әйтелә. *Миҫалы булмау.* ■ *Бармаҡтарың һинең — һары ҡамыш, аҡ көмөшкә миҫал тырнағың* (Халыҡ йырынан).

**3.** Математик ғәмәлдә ҡулланырға өйрәнгәндә күнекмә өсөн алынған үрнәк. *Миҫалды эшләү.*

● *Эшлекле миҫалға ҡарар, эшлекһеҙ мыҫҡалға ҡарар.* Мәҡәл.

**МИҪЛЕ** *бәйл. иҫк. кит.* Һымаҡ, шикелле. *Борон заман башҡорттарҙың торған ере булған тиҙәр миҫле донъя йыһанылай.* Д. Юлтый. *Даръя миҫле туп-тулылыр ер йөҙө мәхлүк илә.* Ғ. Соҡорой. *Был донъяҡайҙарҙың ғүмере фани, миҫле ҡояш сығып байыуы* (Халыҡ йырынан).

**МИ́ТИНГ** [*рус.* ⟨ *ингл.*] *и.* Көн үҙәгендәге мөһим, күбеһенсә политик мәсьәлә буйынса ойошторолған күмәк йыйылыш. *Тантаналы митинг. Траур митингыһы. Митинг үткәреү.* ■ *Михаил Иванович [Калинин] Өфө тимер юлсыларының йыйылышына барҙы. Өс мең кеше ҡатнаш-*

*кан йыйылыш митингыга әйләнде.* «Ағиҙел», 1965, № 11.

**МИТҠАЛ** [*фарс.*] *и.* Беше итеп һуғылған йоҡа ситса. *Аҡ митҡал. // Митҡал күлдәк. Митҡал япма.* ■ *[Зәйнәп:] Тере сағында ни етте, шуны кейеп йөрөгәне еткән, үлгәс, исмаһам, аҡ митҡалға төрөнөп ятһын.* И. Ғиззәтуллин.

**МИТӘҺЕНЕҮ** [*ғәр.*] *ҡ. һөйл.* **1.** Иҫәпкә алырлыҡ һанап, нимәгәлер риза булыу; мөрхәтһенеү. *[Баһау:] Бер һыйырҙы бөгөндән етәкләтеп ҡайтарам. Уға ла митәһенмәһә, йылҡы нәҫеленән бер баш һайлап алһын.* Ж. Кейекбаев.

**2.** Әҙәмгә һанау, һанға алыу. *Митәһенеп килеү. Бала-сағаны митәһенмәү.*

**МИФ** [*рус.* ⟨ *гр.*] *и. кит.* **1.** Аллалар, батырҙар һәм ер-һыу, донъяның барлыҡҡа килеүе тураһындағы боронғо халыҡ хикәйәттәре. *Боронғо грек мифтары. Прометей тураһындағы миф.* ■ *«Аҡбуҙат» поэмаһы асылда — Урал батыр тураһындағы мифтың дауамы.* Ә. Харисов.

**2.** *күсм.* Ысынға оҡшамаған, дөрөҫлөккә тап килмәгән нәмә; уйҙырма. *Көнбайыштағы хәрби тарихсылырҙың .. ҡайһы берҙәре әле булһа ниндәйҙер «рус мөхжизәһе» тураһындағы мифты ҡабатлайҙар.* «Совет Башҡортостаны», 1967, 9 май.

**МИФИК** *с.* **1.** Мифҡа (1 мәғ.) мөнәсәбәтле. *Мифик образ. Мифик сюжет.* ■ *Башҡорт халыҡ ижадында мифик легендалар ҙур урын алған булған, был легендаларҙың шаҡтай ҙур өлөшө Башҡортостандағы тау, йылға күл исемдәре менән бәйләнешле булған.* С. Галин. *Ҡобайырсылар, йырсылар хыялында Салауат мифик геройҙар образы менән һүрәтләндерелә.* Ә. Харисов.

**2.** *күсм.* Ысынға тап килмәгән, дөрөҫкә оҡшамаған; уйҙырма. *Мифик көс.*

**МИФО́ЛОГ** [*рус.*] *и.* Мифология (2 мәғ.) буйынса белгес.

**МИФОЛОГИК** Мифологияға мөнәсәбәтле. *«Урал батыр» мифологик поэмаһында Урал батыр халыҡ ирке өсөн көрәшеүсе батыр итеп бирелә.* М. Сәғитов. *Мифологик образдар .. донъяны материалистик танып белә алмаған осорҙа тыуған.* В. Әхмәҙиев.

**МИФОЛО́ГИЯ** [*рус.* ⟨ *гр.*] *и. кит.* **1.** Мифтар (1 мәғ.) йыйылмаһы. *Башҡорт мифологияһында һөйләнеүенсә, йөҙ йылдан йылан аждаһаға, .. мең йылдан юхаға әйләнә.* Ә. Харисов.

**2.** Мифтарҙы өйрәнә торған фән. *Мифология нигеҙҙәре.*

**МИХА-ХА: иха-ха ла миха-ха** *ымл.* бушҡабарға гел көлөп, шарҡылдап торған кешегә һуҡранып әйтелә. *Эште уйламайҙар, иха-ха ла миха-ха.*

**МИХНӘТ** [*ғәр.*] *и.* Баштан кисерелгән ауырлыҡ; ғазап, яфа. *Һуғыш михнәте. Михнәт күреү. // Михнәт йылдар.* ■ *Ул ҡарт [әсәй] инде, ауыр ғазап, михнәт менән тулған үткәне, ул күтәргән байҙың ҡәһәр эшен һәм ялангас ғаилә йөктәрен.* Ғ. Сәләм. *Ошо аттан күргән михнәттәрҙе онота алмайым әле бөгөн дә.* Х. Ҡунаҡбай. **Михнәт килтереү** яфалау, интектереү. **Михнәт йотоу** (*йәки* **сигеү, кисереү**) ғазап сигеп, ыҙаланып йәшәү. *Сеү, балам, сеү!.. Ят яныма, ҡил, икәүләп йоҡлайыҡ. Йоҡлайыҡ мәңге уянмай, юҡҡа михнәт йотмайыҡ.* Т. Йәнәби.

● *Һәр михнәттең бер рәхәте бар.* Әйтем.

**МИХНӘТЛЕ** *с.* Яфалы, ғазаплы, ауыр. *Михнәтле тормош.* ■ *Һалдат дуҫтар! Ниндәй юлдар үттек, ни михнәтле йылдар кисерҙек!* Ғ. Әмири.

**МИХНӘТЛӘНЕҮ** *ҡ.* Ауырлыҡ, ғазап кисереү; яфаланыу. *Михнәтләнеп йәшәү.* ■ *Йән аямай сарыф итә уның өсөн барлыҡ көсөн, төн йоҡоһон ҡалдыра михнәтләнә уның өсөн.* М. Сабит.

**МИХРАП** [*ғәр.*] *и. дини* **1.** Мәсеттә мулла намаҙ уҡый торған махсус урын. *[Сабир мулла:] Зыя Камалиҙың минең михрабыма аяҡ баҫыуына, минең урынға мулла булыуына аслан ризалығым юҡ.* Б. Ишемғол.

**2.** *күсм. иҫк.* Изге урын.

◆ **Күңел михрабы** күңел түре. *Йәшерен мөхәббәттәр, изге уйҙар күңелем михрабына тулдылар.* Х. Ғәбитов.

**МИҺЕР** [*фарс.*] *и. иҫк.* **1.** Яҡшы мөнәсәбәт, кешегә эшләнгән изгелек; шәфҡәт.

**2.** Кешегә булған йылы тойғо; дуҫлыҡ. *Миһер тойғоһо.*

**3.** *күсм.* Ҡояш. *Миһер нуры.*

**МИҺЛӘТ** [*ғәр.*] *и. иҫк.* Бер нәмәне кисектерергә бирелгән рөхсәт. *Миһләт алыу. Миһләт биреү. Миһләт һорау.* ■ *[Егет:] Миңә өс көнгә миһләт бирегеҙ, ҡыҙҙы өс көн эсендә табырмын* (Әкиәттән).

● *Әмәлен тапҡан Лоҡманға әжәле мең йылға миһләт биргән.* Мәҡәл.

**МИҺМАН** [*фарс.*] *и. иҫк.* Ҡунаҡ. *Миһман булыу.* ■ *[Хөсәйенов — Мусаға:] Йомошоғоҙҙо ҡуҙғатмай тороғоҙ, мин һеҙгә үҙемдең яҡын кешем һәм миһманым тип ҡарайым.* С. Агиш.

**МИҺЫРБАН** [*фарс.*] *и. иҫк.* Шәфҡәтлелек, мәрхәмәтлелек, кешелеклелек; рәхим-шәфҡәт. **Миһырбаны килеү** күңеле йомшарыу, шәфҡәте килеү; шәфҡәтлеләнеү. **Миһырбан эйәһе** йомшаҡ күңелле, шәфҡәтле кеше.

**МИҺЫРБАНЛЫ** *с.* **1.** Йәлләй белә торған йомшаҡ күңелле; мәрхәмәтле; бауырмал. *Миһырбанлы кеше. Миһырбанлы булыу.*

**2.** Йылы йомшаҡ мөнәсәбәтле; ягымлы. *Итәгәтле, миһырбанлы инең, ҡапыл ҡырыҫайҙың ниңәләр.* А. Игебаев.

**МИҺЫРБАНЛЫҠ** *и.* Яҡшы, йомшаҡ күңеллелек; шәфҡәтлек. *Миһырбанлыҡ итеү. Миһырбанлыҡ күрһәтеү.* ■ *Ишек төбөнә кемдер ташлап киткән был мәхлүкте миһырбанлыҡ күрһәтеп, үҙ бүлмәһендә аҫырамаҡ булдылар.* Ш. Янбаев.

**МИҺЫРБАНҺЫҘ** *с.* Аяуҙы белмәгән ҡаты бәғерле; рәхимһеҙ. *Миһырбанһыҙ кеше.* ■ *Ул [Митрошка] ҡаты бәғерле, миһырбанһыҙ бай ҡулында каторга эшенә дусар булған.* Ғ. Ғүмәр. *Иллегә еткәндә бер ҡатын да матур булмай, ә матурлыҡ эҙҙәре генә тороп ҡала. Тәбиғәт ҡатындарға ҡарата айырыуса миһырбанһыҙ.* И. Абдуллин.

**МИҺЫРБАНҺЫҘЛЫҠ** *и.* Ҡаты бәғерлек; рәхимһеҙлек. *Миһырбанһыҙлыҡ күрһәтеү.*

**МИ́ЧМАН** [*рус.* ⟨ *ингл.*] *и.* **1.** СССР хәрби диңгеҙ флотында (1940—1971 й.) старшиналар со-

ставындағы юғары дәрәжә һәм шул хәрби дәрәжәне йөрөткән кеше. *Мичман дәрәжәһе.*

**2.** СССР хәрби диңгеҙ флотында (1972 йылдың ғинуарынан башлап) үҙ теләге менән сроктан тыш хеҙмәт итеүселәргә бирелгән хәрби дәрәжә һәм шул дәрәжәне йөрөткән кеше.

**3.** Революцияға тиклемге Россияла: флот офицерҙарының түбәнге дәрәжәһе һәм шул дәрәжәне йөрөткән кеше.

**МИШЁНЬ** [*рус.* ‹ *фарс.*] *и.* Төҙәп атыу өсөн яһап ҡуйылған махсус нәмә; сәп. *Түңәрәк мишень. Мишенгә атыу.* / Ата торған объект. *Танкка ата торған үҙе йөрөмәле реактив снарядтар мишенде оҫта таба.* «Совет Башҡортостаны», 1968, 2 июль.

**МИШУРА́** [*рус.*] *и.* Көмөш, алтын һ. б. нәмә ҡушып яһалған затлы еп һәм һәр төрлө ялтырауыҡ. *Мишура менән сигеү.* ■ *Соға өҫтөнән түңәрәкләп баҫҡан уҡаһы иҫкереп, ҡарайып, мишура булған.* Ғ. Дәүләтшин.

**МИШӘ** *и. ҡар.* **бешә.**

**МИШӘР** *и.* Башҡортостан һәм Татарстанда йәшәгән этник төркөм һәм шул төркөмдөң бер вәкиле (татар теленең көнбайыш диалектында һөйләшә). *Мишәр ауылы.*

**МИШӘҮ** *и.* Ҡурыҙдан үреп яһаған артмаҡ. *Ҡарагужаҡ [Мишәүле кенәз] йәнлек атырға барһа, мишәүен алып китер ҙә шуны һәр саҡ тултырып алып ҡайтыр ине.* «Башҡорт шәжәрәләре», 1960.

**МОБИЛИЗАЦИОН** [*рус.* мобилизационный] *с.* Мобилизацияға мөнәсәбәтле. *Мобилизацион пункт. Мобилизацион әҙерлек.* ■ *Армияны мобилизацион яҡтан әҙерләүгә Оборона Халыҡ Комиссариатының шул саҡтағы етәкселәренең хаталары ла ҙур зыян килтерҙе.* Т. Кусимов.

**МОБИЛИЗАЦИЯ** [*рус.* ‹ *фр.*] *и.* **1.** Һуғыш башланыу сәбәпле ғәскәри йәштәге күмәк халыҡтың бер юлы хәрби хеҙмәткә алыныуы. *Мобилизация иғлан итеү. Мобилизация үткәреү.* ■ *Ошо мөрәжәғәт бөтә илгә таралды ла,.. Октябрь социалистик ҡояшы нурында йылынып өлгөргән бөтә халыҡтың йөрәгенә ҡайнар көс һалды. Мобилизация башланыр-башланмаҫ, добровольцтар яҙылып китә башланы.* Һ. Дәүләтшина.

**2.** Берәй ҙур эште башҡарыу өсөн күмәк халыҡтың ылыҡтырылыуы. *Мобилизация буйынса эшкә китеү.*

**3.** Ҡораллы көстәрҙең хәрби хәлгә күсерелеүе. / Халыҡ хужалығының барлыҡ тармаҡтарының хәрби хәлгә күсерелеүе.

**4.** *күсм.* Берәй ҙур эште башҡарыу өсөн ниҙең дә булһа әҙерлек хәленә ҡуйылыуы.

**МОБИЛИЗАЦИЯЛАНЫУ** *к. төш. ҡар.* **мобилизациялау.** *Фабриканың ударниктары көрәшкә мобилизацияланды.* Ә. Ихсан.

**МОБИЛИЗАЦИЯЛАУ** *к.* **1.** Мобилизация буйынса хәрби хеҙмәткә алыу. *Ул [Бәхтизин] халыҡты Ҡыҙыл Армия сафына мобилизациялай.* В. Исхаков.

**2.** Мобилизация буйынса эшкә алыу. *Эшкә мобилизациялау.*

**3.** Ҡораллы көстәрҙе хәрби әҙерлек хәленә күсереү. / Халыҡ хужалығының барлыҡ тармаҡтарын хәрби әҙерлек хәленә күсереү.

**4.** *күсм.* Ниҙе лә булһа ҙур бер эш башҡарыу өсөн әҙерлек хәленә ҡуйыу, туплау. *Көстө мобилизациялау.*

**МОҒАР** [*рус.* ‹ *вен.*] *и.* Мал аҙығы өсөн үҫтерелә торған бер йыллыҡ ҡыяҡлы үлән; мажар тарыһы. *Могар орлого. Могар сәсеү.* ■ *Йәйҙең икенсе яртыһында файҙаланыу өсөн могар һымаҡ үләндәрҙе сәсергә кәрәк.* «Совет Башҡортостаны», 1965, 14 май.

**МОҒАЙЫН** [*ғәр.*] *мөн.* Һөйләмдең төрлө урынында килеп, ышаныслы, ныҡлы фаразды белдерә. *Теге Тимашев беҙгә кире ҡайтманы.. Ул юғалды. Моғайын, шпион булғандыр.* Д. Юлтый.

**МОҒАНИД** [*ғәр.*] *с. иҫк. кит.* **1.** Еңмеш, үҙ һүҙле, тиҫкәре. *Моғанид кеше.*

**2.** Дошманлыҡ хисе һаҡлаған; дошман. // *Был һүҙҙәрҙе яратмаған моғанидтар бигизбә вә гәйзә ярылып үлһен.* Аҡмулла.

**МОҒАРӘЗӘ** [*ғәр.*] *иҫк. кит.* Ыҙғыш, талаш.

□ **Моғарәзә ҡылыу** ыҙғышыу, талашыу.

**МОҒАУИН** [*ғәр.*] *и. иҫк. кит.* Ярҙамсы вазифаһын үтәгән кеше; ярҙамсы. *Моғауин булыу.* ■ *Бер рәис, дүрт моғауин, дүрт секретарь һайларға тигән һүҙгә килделәр.* А. Таһиров.

**МОҒАУӘНӘ** [*ғәр.*] *и. иҫк. кит.* Ярҙам. *Моғауәнә күрһәтеү.*

**МОҒОЛОЙ** *с. диал.* Мөгөҙһөҙ; туҡал. *Моғолой һыйыр.*

**МО́ДА** [*рус.* ‹ *фр.*] *и.* **1.** Билдәле бер ижтимағи даирәлә билдәле бер ваҡытты көнкүреш рәүешендә, бигерәк тә кейемгә ҡарата билдәләнгән теге йәки был талап өҫтөнлөгө. *Иҫке мода. Яңы мода. Мода буйынса кейенеү. Модаға эйәреү. Модаға инеү. Моданан сығыу.* ■ *Беләҙектәр хәҙер ҙә модала, уларҙың ассортименты эле бигерәк тә бай.* «Башҡортостан ҡыҙы», 1968, № 9.

**2.** Билдәле бер замандағы талапҡа тура килгән кейем өлгөһө. *Модалар журналы. Модалар йорто. Модалар күргәҙмәһе.*

**3.** *һөйл.* Билдәле бер осорға хас ғәҙәт. *Беҙҙең заманда дискотекалар модала булды.*

**МОДАЛЛЕК** *и. лингв.* Телмәрҙең ысынбарлыҡҡа булған мөнәсәбәтен һөйкәлеш формалары, интонация, инеш һүҙҙәр ярҙамында белдергән грамматик категория; мөнәсәбәтлек. *Модаллек категорияһы. Модаллек төшөнсәһе.*

**МОДАЛЫ** *с.* Модаға (1 мәғ.) тура килгән, модаса эшләнгән. *Модалы күлдәк. Модалы костюм.* / Билдәле бер осорҙа ныҡ таралған, шул осорға хас. *Модалы роман. Модалы шағир.*

**МОДАЛЬ** [*рус.* модальный]: **модаль һүҙ** *лингв.* модаллек төшөнсәһен белдергән һүҙ; мөнәсәбәт һүҙ.

**МОДАСЫ** *и. һөйл.* Яңы модалар эшләү менән шөғөлләнгән кеше. *Модасылар егеттәрҙе лә онотмаған: бишенсе һүрәттәге костюм ниндәй килешле.* Ф. Мөхәмәтьянов.

**МОДЕЛИ́ЗМ** [*рус.*] *и. тех.* Машина, механизм һәм төрлө ҡоролма моделдәрен төҙөү, эшләү һәм һынау эше. *Моделизм менән шөғөлләнеү.*

**МОДЕЛЛЕ** *с.* Иң һуңғы мода өлгөһөнә тап килешле. *Моделле туфли.*

**МОДЕЛСЕ** *и.* Моделдәр (1 мәғ.) яһау оҫтаһы; модельер. *Моделсе булып эшләү.*

**МОДЕ́ЛЬ** [*рус.* ‹ *фр.*] *и.* **1.** Берәй нәмә эшләү өсөн алынған үрнәк, өлгө. *Күлдәк моделе. Туфли моделе.* ■ *Һуңғы йылдарҙа Өфө модалар йорто кейем-һалымдың күп кенә яңы моделдәрен эшләне.* Ф. Мөхәмәтьянов.

**2.** Берәй нәмәнең кесерәйтеп яһаған үрнәге. *Самолёт моделе. Модель яһау.* ■ *[Илһам:] Еңдем, әсәй. Минең моделем бөтәһенекенән дә оҙағыраҡ осто.* Ә. Мирзаһитов.

**3.** Ниндәй ҙә булһа бер конструкцияның өлгөһө, маркаһы. *Автомобилдең яңы моделе.*

**4.** Ҡойоп эшләнә торған нәмәләргә ҡалып яһау өсөн ҡулланылған тәүге өлгө. *[Александр:] Көнөнә нисәмә теш моделе әҙерләйем, ә улар бер ҡасан да бер-береһен ҡабатламай.* Ә. Таһирова.

**МОДЕЛЬЕ́Р** [*рус.*] *и. ҡар.* **моделсе.**

**МОДЕРНИЗА́ЦИЯ** [*рус.*] *и.* **1.** Заман талаптарына яраҡлы итеп ниҙелер үҙгәртеү, яңыртыу эше. *Модернизация осоро.*

**2.** Боронғо нәмәне уға хас булмаған яңы һыҙаттар индереп үҙгәртеү эше.

**МОДЕРНИЗАЦИЯЛАУ** *ҡ.* **1.** Яңы талаптарға яуап бирерлек итеп, үҙгәртеп эшләү; яңыртыу. *Витаминсылар производствоға яңы ҡоролмалар, ҡорамалдар индереү менән етди шөғөлләнә, цехтарын модернизациялай.* «Совет Башҡортостаны», 1986, 18 май.

**2.** Боронғо нәмәне уға хас булмаған яңы һыҙаттар индереп үҙгәртеү. *Легенданы модернизациялау.*

**МОДЕРНИ́ЗМ** [*рус.* ‹ *фр.*] *и.* 19 быуат аҙағы — 20 быуат башындағы һынлы сәнғәт, биҙәү сәнғәте һәм архитектурала үткән дәүер сәнғәтенә үҙен ҡаршы ҡуйған йүнәлеш.

**МОДИФИКАЦИОН** [*рус.* модификационный] *с. кит.* Модификацияға мөнәсәбәтле. *Модификацион күренеш.*

**МОДИФИКА́ЦИЯ** [*рус.* ‹ *фр.*] *и. кит.* **1.** Берәй нәмә йәки күренештең үҙ асылын һаҡлаған килеш икенсе рәүешкә үҙгәреүе.

**2.** Шул рәүештә үҙгәртелгән нәмә йәки күренеш. *Ҡар-боҙҙоң модификацияһы.*

**МО́ДУЛЬ** [*рус.* ‹ *лат.*] *и.* **1.** *физ., тех.* Ҡайһы бер коэффициент йәки дәүмәлдәр атамаһы. *Ҡыҫым модуле. Модулдәр системаһы.*

**2.** *архит.* Бинаның төрлө өлөшөн үҙ-ара бер самаға килтереү өсөн алынған үлсәү берәмеге.

**3.** *тех.* Ҡорамал йәки ҡоролманың бер типтағы деталдәрҙән йыйылып, төрлө маҡсатта ҡулланылған өлөшө. *Яңы сериялағы ҡараптар модулле типтағы күп маҡсатлы идара итеүсе комплекстарға экипаждар алып барыу өсөн тәғәйенләнгән.* «Совет Башҡортостаны», 1986, 22 май.

**МОДУЛЯ́ЦИЯ** [*рус.* ‹ *лат.*] *и.* **1.** *муз.* Бер тондың икенсе тонға күсеүе. / Тауыш юғарылығының үҙгәртелеүе.

**2.** *физ.* Юғары йышлыҡтағы тирбәлештең түбәнерәк йышлыҡтағы бүтән тирбәлештәргә эйәреп үҙгәреүе.

**МОҘ** *и. диал.* Боҙ.

**МОҘҒА** *и.* Айырған ҡортто ябып тороу өсөн ҡабыҡтан эшләнгән һауыт. *Ағас башына меңгәс, Баһау моҙғаны бер ботаҡҡа элде лә, күсте шуның эсенә һыпырып төшөрә башланы.* Ж. Кейекбаев.

**МОҘРАУ** *ҡ. диал.* Талсығыу, әлһерәү. *Эҫегә моҙрау.*

**МОЗАИК** *с.* Мозаикаға мөнәсәбәтле. / Мозаика рәүешендәге; мозаика менән эшләнгән, мозаика менән биҙәлгән. *Мозаик панно. Мозаик өҫтәл. Мозаик һүрәт.*

**МОЗА́ИКА** [*рус.* ‹ *ит.*] *и.* **1.** Цемент йәки мастика өҫтөнә төрлө төҫтәге быяла, таш, мәрмәр һәм башҡа нәмә ярсыҡтары йәбештереп яһаған рәсем йәки биҙәк. / *йыйн.* Шул рәсем йәки биҙәк өсөн файҙаланған быяла, мәрмәр йәки башҡа нәмә ярсыҡтары. / *күсм.* Төрлө элементтан торған һәр төрлө сыбар нәмә.

**2.** Шундай рәсем йәки биҙәк эшләү сәнғәте. *Мозаика менән шөғөлләнеү.*

**МОҠ** *и. диал.* **1.** Һалам, бесән вағы; кәбәк. *Балсыҡҡа моҡ ҡушыу.*

**2.** Ағас сөрөгө. *Моҡҡа күмеү.*

**МОҠАБИЛ** [*ғәр.*] *и. иҫк. кит.* Ҡара-ҡаршы бирелгән нәмә. *Был бәләкәй генә шатлыҡ моҡабиленә Зөһрә туташ өсөн тау кеүек хәсрәттәр ваҡиғ булды.* З. Өммөти.

□ **Моҡабил булыу** ҡара-ҡаршы килеү; ҡаршылашыу.

**МОҠАБӘЛӘ** [*ғәр.*] *и. иҫк. кит.* **1.** Ике нәмәнең үҙ-ара ҡаршы ҡуйып сағыштырылыуы. *Моҡабәлә итеү.*

**2.** Ике кеше йәки нәмәнең үҙ-ара осрашыуы. *Дуҫтар менән мөкабәлә.*

**3.** Ҡаршылыҡ; ҡамасау, тоткарлыҡ. *Моҡабәлә ҡылыу. Моҡабәләгә осрау.* ■ *Диңгеҙҙең был ҡәһәренә, был асыуына иҫке вә хәстә бер бәләкәй генә кәмә нисек түҙһен, нисек уға мөкабәлә итеп маҡсатына ирешһен.* Ә. Таңғатаров.

**4.** *мат.* Тигеҙләмә.

♦ **Ғилем әлжәбр вә мөкабәлә** *иҫк.* алгебра.

**МОҠАЛЫУ** *ҡ. диал.* Тотлоғоу. *Моҡалып һөйләү.*

**МОҠАМӘРӘ** [*ғәр.*] *и. иҫк. кит.* Уйындағы кемуҙарҙан алып барылған көрәш, ярыш. *Йәнә Солох бәғдендә Берҙебәк солтан Мансур нәһер Иҙелдең ике тарафынан моҡамәрә өсөн уҡ аттылар. Һәр икеһе бигайәт тирандас әмирҙәр ине.* «Башҡорт шәжәрәләре», 1960.

**МОҠАТӘЛӘ** [*ғәр.*] *и. иҫк. кит.* Ҡара-ҡаршы һуғыш. *Ул заманда [Күсемхан заманында] һарайсыҡта Бураҡ хан моҡатәләһе булды.* «Башҡорт шәжәрәләре», 1960.

**МОҠАҮӘЛӘ** [*ғәр.*] *и. иҫк. кит.* **1.** Әңгәмә.

**2.** Ике аралағы килешеү. *Моҡаүәләгә килеү.*

**МОҠЛАУ** *ҡ.* **1.** Умарта эсендә ваҡ ҡына ҡорттар барлыҡҡа килеү, ҡортлау.

**2.** *диал.* Бесәнде, һаламды ваҡлау; кәбәкләү. *Бесәнде моҡлап биреү.*

**МОҠОМ** *и. диал.* Бауырһаҡ. *Моҡом бешереү. Сәйҙе моҡом менән эсеү.*

**МОҠРАУ** *ҡ.* Берәй нәмә юҡлыҡтан мохтажлыҡ кисереү; йонсоу. *Тоҙға моҡрау. Иткә моҡрау.*

**МОҠСАЙ** *и.* **1.** *диал. кар.* **тоҡсай.** *Моҡсайға һалыу.*

**2.** Йәҙрә һауыты. *Моҡсайҙағы йәҙрә.*

**МОҠТАДИР** [*ғәр.*] *с. иҫк. кит.* **1.** Иғтыяр көсө ҙур; көслө. *Моҡтадир кеше.* / Булдыҡлы, һәләтле. *Фәнгә моҡтадир.*

**2.** Яҡшы сифаттары күп булған; бай. *Хыялдарға моҡтадир кеше.*

**МОҠТӘБӘС** [*ғәр.*] *с. иҫк. кит.* Ниндәйҙер бер сығанаҡтан файҙаланып яҙылған, күсереп алынған. *Нәбүәттән моҡтәбәс ғилем — бер нур, бар сырағын һауаһы һүндермәһә.* Аҡмулла.

**МОҠӘДДӘР** [*ғәр.*] *и.* Тәҡдир ителгән, алдан билдәле булған нәмә. *[Бабсаҡ:] Хоҙай ҡушһа, мин сәфәр йөрөрмөн, ти, моҡаддәрҙә ҡушҡанды күрермен, ти.* «Бабсаҡ менән Күсәк».

**МОҠӘЙЙӘД** [*ғәр.*] *с. иҫк. кит.* **1.** Нимәгәлер бәйләнеше булған, бәйле. *Ваҡиғаға моҡәййәд.*

**2.** Яҙып ҡуйылған, теркәлгән. *Тарих битенә мөҡәййәд ваҡиға.*

**3.** Билгеле бер сиге булған; сикләнгән. *Моҡәййәд мөмкинселек.*

**МОЛ** [*рус.* ⟨ *ит.*] *и.* Караптарҙы порттарҙа тулҡындан ышыҡлау өсөн хеҙмәт иткән оҙон бейек ҡоролма. *Яр буйындағы молдар.* ■ *Порттың молдарындағы .. крандарҙың күплегенә ғәжәп ҡалаһың.* «Совет Башҡортостаны», 1966, 1 сентябрь.

**МОЛДАВАН** *и.* Молдованың төп халҡын тәшкил иткән милләт һәм шул милләттең бер кешеһе (роман телдәренең береһендә һөйләшә). *Молдаван халҡы. Молдаван ҡатыны. Молдаван теле.*

**МОЛДАВАНСА** *р.* **1.** Молдаван телендә. *Молдаванса һөйләшеү.*

**2.** Молдавандарға хас рәүештә. *Молдаванса бейеү.*

**МОЛЕ́КУЛА** [*рус.* ⟨ *фр.*] *и.* Матдәнең төп химик үҙенсәлегенә эйә булған иң ваҡ өлөшсәһе.

**МОЛЕКУЛЯР** [*рус.* молекулярный] *с.* Молекулаға мөнәсәбәтле. *Молекуляр төҙөлөш.* / Молекулаларҙы өйрәнеүгә бәйле. *Молекуляр теория.*

**МОЛЕСКИ́Н** [*рус.* ⟨ *ингл.*] *и.* Ҡалын, беше мамыҡ туҡыма. *Ҡара молескин.* // *Молескин салбар.* ■ *Туҙан һымаҡ ағыулы химикаттар менән эш иткәндә, саң үткәрмәй торған молескиндан тегелгән кейем кейәләр.* «Совет Башҡортостаны», 1965, 18 март.

**МОЛИБДЕ́Н** [*рус.* ⟨ *гр.*] *и.* Химик элемент, көмөш һымаҡ йылтырауыҡлы ҡаты металл.

**МОЛҠ-МОЛҠ** *оҡш.* Һимеҙ, йомшаҡ булып һелкенеп торған хәрәкәтте белдергән һүҙ. *Молҡ-молҡ итеү. Молҡ-молҡ килеү.*

**МОЛҠОЛДАУ** *ҡ.* Һимеҙ булып һелкенеп тороу. *Ҡойроғо молҡолдап торған ҡуй.*

**МОЛҠОТОУ** *ҡ.* **1.** Йоп-йомро итеп һимертеү (малға ҡарата). *Малды молҡото́п һимертеү.*

**2.** Күбеккә әйләндереү; ҡабартыу, күпертеү. *Ҡымыҙҙы молҡотоу.*

**МОЛҠОУ** *ҡ.* **1.** Һимеҙлектән тулышып, йоп-йомро булыу. *Молҡоп тороу.* ■ *[Сара:] Шулай молҡоп та тормаҕас, ниндәй директор бисәһе булам ти мин.* З. Биишева.

**2.** Күбеккә әйләнеү; ҡабарыу, күпереү. *Ҡымыҙ молҡоп ултыра.*

**МОЛЛЮ́СК** [*рус.* ⟨ *лат.*] *и. зоол.* Йомшаҡ тәнле умыртҡаһыҙ тереклектәр (күбеһе ҡабырсаҡлы була); әкәм-төкәм. *Диңгеҙ моллюскалары.*

**МОЛОЙОУ** *ҡ.* Бойоҡ, моңһоу төҫ алыу; моңһоуланыу. *Молойоп ҡына байып барған ҡояш.*

**МОЛОЙОШОУ** *ҡ. урт. кар.* **молойоу.** *Молойошоп ултырыу.*

**МОЛОТИ́ЛКА** [*рус.*] *и.* Ашлыҡ һуға торған машина; һуҡҡыс. *Ат молотилкаһы. Молотилка барабаны. Моторлы молотилка.* ■ *Инде һуңғы кәбәндәге көлтәләрҙе һуғырға тотонғандар. Молотилка гөр килә.* Б. Бикбай.

**МОЛОУ** *ҡ. диал.* Молойоу. *Молоп ултырыу.*

**МОЛЬБЕ́РТ** [*рус.* ⟨ *нем.*] *и.* Һүрәт төшөргәндә киндерле рамды ҡуя торған өс аяҡлы таған. *Мольберт тотоп Низам инә.* М. Кәрим.

**МОМЕ́НТ** [*рус.* ⟨ *лат.*] *и.* **1.** Бик ҡыҫҡа ваҡыт араһы. *Беҙҙең көслө атыуға сыҙамай немецтар кире боролоп китте.. Ошо моментта ашап алырға булдыҡ.* С. Әлибаев.

**2.** Берәй нәмә менән билдәләнгән ваҡыт араһы; билдәле бер осор. *Уңайлы момент.* ■ *Эште бөлдөрөп ҡуймайыҡ. Хәҙер бик ауыр момент.* Д. Юлтый.

**3.** Эш-хәлдең айырым бер яғы. *Эштәге ыңғай момент.* / Эш өсөн уңайлы мәл. *Моменттан файҙаланып ҡалыу.*

**МОНАЗАРА** [*ғәр.*] *и. иҫк. кит.* Һүҙ көрәше; бәхәс. *Моназараға килеү.* ■ *[Ғисмәт:] Тағы моназараға керешәләр! Эй, Ямал! Бына былар тағы талашырға керешәләр, тыйығыҙ әле.* А. Таһиров.

□ **Моназара ҡылыу** һүҙ көрәштереү, бәхәсләшеү.

**МОНАЗАРАСЫЛ** *с. иҫк.* Бәхәсләшергә әүәҫ. *Моназарасыл кеше. Моназарасыл булыу.*

**МОНАЗИР** [*ғәр.*] *и. иҫк. кит.* Һүҙ көрәштереүсе, бәхәскә оҫта кеше. *Һүҙгә оҫта моназир.* // *Моназир шәкерт тип маҡтайһы урынға, хәлфә уны [Кинйәне] ҡыҙарынып-бүртенеп әрләргә, кәһәрләргә тотона.* Ғ. Ибраһимов.

**МОНАЙЫШ** *и. диал.* Төҫкә йәмһеҙ генә оялсан кеше.

**МОНАР** *и.* **1.** Йәйге оҙаҡ эҫеләрҙә була торған ҡайнар ҡоро томан һымаҡ булып торған һауа күренеше (үҫемлектәрҙе көйҙөрөп, игендең емен ҡурып зарар итә). *Монар һуҡҡан.* ■ *Былтыр картуфты монар һуғып харап итте.* Ш. Янбаев. *Арпа ғына сәсһәң, сәс сиҙәмгә, яҙғы ла ғына монар алмаһын* (Халыҡ йырынан).

**2.** Ер өҫтөнән земберләп күтәрелгән эҫе һауа; һағым. *Ә унда офоҡта, шыйыҡ ҡына күкһел томан булып монар емелдәй.* Ф. Иҫәнғолов.

**3.** *диал.* Томан. *[Һәүбән:] Бөгөн тәүге һунарҙа юлыҡтым мин монарға.* «Аҡбуҙат».

♦ **Монар көпшәһе** аҡ сатыр сәскәле, шыма һабаҡлы, эре һаҫыҡ көпшә; айыу көпшәһе.

**МОНАРЛАНЫУ** *ҡ.* Күтәрелгән эҫе һауа тулҡын-тулҡын булып томан, болот һымаҡ күренеп тороу. *Яҙғы матур ҡояш, монарланып сыҡҡан һауа тулҡыны уларҙың шатлыҡтарын .. тағы ла*

*сэйтә ине.* Н. Ҡәрип. / Алыҫтан күгелйемлә-п күренеү (һауаға ҡарата).

**МОНАРЛЫ** *с.* Монар (1 мәғ.) төшкән. *Монар-і иртә. Монарлы йәйге көндәр.* ■ *Июль айы-ің монарлы ҡыҙыуында әлһерәп, серле тын-ікка талған ҡарағайлы ҡара урмандар.* З. Бии-ева.

**МОНА́РХ** [*рус.* ⟨ *гр.*] *и.* Дәүләттең нәҫелдән ілгән йәки һайланып ҡуйылған тулы хоҡуҡлы ікимы (батша, король, шаһ, солтан һ. б.). *Абсо-от монарх*

**МОНАРХИ́ЗМ** [*рус.*] *и.* **1.** Монархияны дәү-эт хакимлегенең берҙән-бер дөрөҫ формаһы тип араған реакцион политик йүнәлеш.

**2.** *кар.* **монархия.**

**МОНАРХИ́СТ** [*рус.*] *и.* Монархизм һәм мо-архия яҡлы кеше. *Монархистар ойошмаһы. Ионархистар заговоры.*

**МОНА́РХИЯ** [*рус.* ⟨ *гр.*] *и.* Юғарғы дәүләт ласы формаль яҡтан тулы хоҡуҡлы дәүләт баш-ығы — монарх ҡулында тупланған эксплуата-орлыҡ дәүләт хөкөмө һәм шундай хөкөмгә :оролған дәүләт. *Абсолют монархия. Конститу-;ион монархия.*

**МОНАРХИЯЛЫ** *с.* Монархияға мөнәсәбәтле. *Ионархиялы дәүләт.*

**МОНАСТЫ́РЬ** [*рус.* ⟨ *гр.*] *и.* **1.** Монах йәки ıонашкаларҙың ере, капиталы булған дини об-щинаһы. *Ирҙәр монастыры. Ҡатын-ҡыҙ монас-ыры.*

**2.** Ошо община ҡарамағындағы сиркәү, тораҡ йорттар һәм территория.

**МОНАТҠЫУ** *к. диал.* Өҫтөнлөк алыу, өҫтөн :ығыу; еңеү.

**МОНА́Х** [*рус.* ⟨ *гр.*] *и.* Монастырҙа йәшәгән, уның талабы, уставы буйынса донъя рәхәтенән баш тартҡан дини община ағзаһы. *Монах булыу.* / *һөйл.* Донъя рәхәтенән ваз кискән ир кешегә ҡарата. *Монах булып йәшәү.*

**МОНАХЛЫҠ** *и.* Монах булыу; монах тор-мошо. *Монахлыҡ ҡабул итеү.* / *һөйл.* Донъяның рәхәтенән ваз кисеп йәшәгән хәл.

**МОНАШ** *и.* Бер башҡорт ырыуының исеме.

**МОНА́ШКА** [*рус.*] *и.* Монастырҙа йәшәгән, уның талабы, тәртибе буйынса донъя рәхәтлеге-нән баш тартҡан дини община ағзаһы (ҡатын--ҡыҙ).

**МОНГО́Л** *и.* Монголия Халыҡ республикаһы-ның төп халҡын тәшкил иткән милләт һәм шул милләттең бер кешеһе. *Монгол халҡы. Монгол ҡатыны. Монгол теле.*

**МОНГОЛОВЕ́Д** [*рус.*] *и.* Монголоведение буйынса белгес.

**МОНГОЛОВЕ́ДЕНИЕ** [*рус.*] *и.* Монголдар-ҙың телен, әҙәмаһын, культураһын һәм тарихын өйрәнгән фәндәр.

**МОНГОЛО́ИД** [*рус.* монголоидный]: **монго-лоид раса** *антроп.* кешелек донъяһындағы ҙур расаларҙың береһе.

**МОНДОРАМА** *р. диал.* Мөлдөрәмә.

**МОНДОРАУ** *к. диал.* Мөлдөрәү.

**МОНИ́ЗМ** [*рус.* ⟨ *гр.*] *и.* Донъяның нигеҙендә бер генә башланғыс (материя йәки рух) ята тип ҡараған философик тәғлимәт; *киреһе* дуализм. *Идеалистик монизм. Материалистик монизм.*

**МОНИ́СТ** [*рус.*] *и.* Монизм яҡлы кеше.

**МОНИСТИК** [*рус.*] *с.* Монизмға нигеҙле мөнә-сәбәтле. *Донъяға монистик ҡараш. Монистик философия.*

**МОНИТО́Р** [*рус.* ⟨ *фр.*] *и. тех.* **1.** Контроль прибор, тикшерә һәм көйләй торған ҡорамал. *Күп каналлы монитор.*

**2.** Телевизион тапшырыуҙар барышын тикшерә торған телевизион экран (телестудияла).

**МОНҠА** *и. диал.* Ботаҡтың төп өлөшө.

**МОНОГАМ** [*рус.* моногамный] *с. кит.* Монога-мияға нигеҙле, моногамияға хас. *Моногам ғаилә.*

**МОНОГА́МИЯ** [*рус.* ⟨ *гр.*] *и. кит.* **1.** Ирҙең бер ҡатын менән тороуына ҡоролған никах форма-һы; *киреһе* полигамия. *Ғаиләнең бүтән төрҙәренә ҡарағанда моногамия — берҙән-бер яраҡлы төр.* В. Ғүмәров.

**2.** Йәнлектәрҙә бер атаның бер йәки бер нисә миҙгел эсендә бер генә инә менән ҡушылы-уы.

**МОНОГРА́ММА** [*рус.* ⟨ *гр.*] *и.* Бергә тоташ-тырып үреп яҙылған бер нисә хәреф.

**МОНОГРАФИК** *с.* Монографияға мөнәсәбәт-ле; монография рәүешендәге. *Монографик тик-шереней.*

**МОНОГРА́ФИЯ** [*рус.* ⟨ *гр.*] *и.* Айырым бер мәсьәләгә бағышланған ҙур ғилми хеҙмәт. *Моно-графия яҙыу.* ■ *Тел, әҙәбиәт ғалимдарыбыҙ һуңғы йылдарҙа айырым яҙыусылар тураһында ҙур һәм яҡшы монографиялар яҙҙылар.* Б. Бик-бай.

**МОНО́КЛЬ** [*рус.* ⟨ *фр.*] *и.* Бер генә күҙ соҡо-рона ҡуя торған һыңар быялалы күҙлек. *Мо-нокль кейеү. Монокль аша ҡарау.*

**МОНОКУЛЬТУ́РА** [*рус.*] *и. а. х.* **1.** Хужалыҡ-та үҫтерелгән берҙән-бер ауыл-хужалығы куль-тураһы.

**2.** Сәсеү әйләнешен һаҡламай, оҙаҡ йылдар буйы бер үк баҫыуға бер иш үҫемлек сәселеүе. *Ҡара һолоноң баҫыуҙы баҫып алыуының төп сәбәбе — бойҙайҙың һәм башҡа бөртөклө аш-лыҡтың монокультураһында, күп йылдар буйын-са бер төр ауыл хужалығы культураһын гел бер майҙанға сәсеүҙән ғибәрәт.* Я. Хамматов.

**МОНОЛИ́Т** [1] [*рус.* ⟨ *гр.*] *и.* **1.** Бөтөн бер ҙур таш. / Бөтөн бер таштан эшләнгән нәмә.

**2.** *геол.* Тупраҡ ҡатламының төҙөлөшөн верти-каль киҫелештә күрһәткән өлгө.

**МОНОЛИТ** [2] [*рус.* монолитный] *с.* **1.** Тотош бер таш хәлендәге. *Монолит колонна.*

**2.** *күсм.* Ныҡ береккән, ойошҡан. *Монолит коллектив. Монолит берҙәмлек. Монолит бу-лыу.*

**МОНОЛИТЛЫҠ** *и.* Монолит булыу сифаты. *Тау тоҡомдарының монолитлығы. Партияның политик монолитлығы.*

**МОНОЛО́Г** [*рус.* ⟨ *гр.*] *и.* Драма һәм әҙәби әҫәрҙәге бер кешенең үҙ-үҙенә, башҡа персонаж-дарға йәки тамашасыға һөйләгән оҙон телмәре. *Лирик монолог. Монолог тыңлау. Монолог уҡыу.* ■ *[Сыртланова:] Монолог бөтөүгә шар-шау артынан Мәгри ҡарсыҡтың тауышын ише-тәм.* Р. Ниғмәти. *Эске монологта геройҙың тор-мошҡа, кешеләргә мөнәсәбәте .. асыла.* Ә. Вахи-тов.

**МОНОЛОГИК** *с.* Монолог рәүешендәге. *Монологик телмәр.*

**МОНОПЛА́Н** [*рус.* ‹ *фр.*] *и.* Фюзеляждың ике яғына берәр генә ҡанат ҡуйылған самолет. *Моноплан ҡанаты. Монопланға ултырыу.* ■ *«К-750» мотоциклының моторы ҡуйылған моноплан ҡанаттарының колаһы 4,8 метр, оҙонлоғо 3,7 метр.* «Совет Башҡортостаны», 1985, 29 март.

**МОНОПОЛИ́СТ** [*рус.*] *и.* **1.** Берәй эш өлкәһендә монополия (1 мәғ.) тотҡан кеше.

**2.** Эре капиталист, эре капитал вәкиле.

**МОНОПОЛИСТИК** *с.* **1.** Монополия принцибына нигеҙле, монополияға (1 мәғ.) мөнәсәбәтле. *Монополистик берләшмә. Монополистик буржуазия.* ■ *Империализм осоронда капитализм монополистик характерҙа булыуы менән айырыла.* «Совет Башҡортостаны», 1965, 5 ноябрь.

**2.** Монополия (2 мәғ.) формаһында булған. *Монополистик ойошма.*

**МОНОПО́ЛИЯ** [*рус.* ‹ *гр.*] *и.* **1.** Берәй нәмәне эшләп сығарыу йәки һатыу өлкәһендәге сикләнмәгән тулы хоҡуҡ. *Дәүләт монополияһы. Тышҡы сауҙа монополияһы.*

**2.** Ниндәйҙер бер хужалыҡ өлкәһендә хакимлыҡ итеү һәм максималь табыш алыу өсөн капиталды концентрациялау нигеҙендә барлыҡҡа килгән эре капиталистик берләшмә. *Капиталистик монополиялар. Монополиялар көрәше. Монополиялар конкуренцияһы.*

**МОНОПОЛИЯЛАШТЫРЫЛЫУ** *ҡ. төш. ҡар.* **монополиялаштырыу.** *Монополиялаштырылған хужалыҡ тармаҡтары.*

**МОНОПОЛИЯЛАШТЫРЫУ** *ҡ.* Ниндәй ҙә булһа эш, хужалыҡ өлкәһендә монополия урынлаштырыу, монополия хәленә килтереү. *Тышҡы баҙарҙы монополиялаштырыу.*

**МОНОПОЛЬ** [*рус.* монопольный] *с.* Монополия принциптарына нигеҙле, монополияға (1 мәғ.) мөнәсәбәтле. *Монополь хоҡуҡ. Монополь биләмә.*

**МОНОРЕ́ЛЬС** [*рус.*] *и.* Бер рельслы аҫмалы юл.

**МОНОТЕЙЗМ** [*рус.* ‹ *гр.*] *и. кит.* Алла берәү тигән дин; *киреһе* политеизм. *Монотеизм идеяһы.*

**МОНОТЕЙСТ** [*рус.*] *и.* Монотеизм яҡлы кеше.

**МОНОТЕИСТИК** *с.* Монотеизмға мөнәсәбәтле. *Монотеистик тәғлимәт.*

**МОНОТИ́П** [*рус.* ‹ *гр.*] *и.* Хәрефтәрҙе айырым-айырым ҡойоп йыя торған типографик машина. *Монотип наборы. Монотип таҫмаһы.*

**МОНТАҘАМ** [*ғәр.*] *с. иҫк. кит.* Тәртипкә килтерелгән, тәртипле.

◆ **Монтаҙам ғәскәр** *шул уҡ* **даими ғәскәр** (*ҡар.* **даими**). *Былар҈ың [ғәскәрҙәрҙең] 1535 кәҙәреһе монтаҙам ғәскәрҙән, ҡалғаны мишәр, башҡорт, танассар иткән ҡалмыҡтарҙан ғибәрәт.* М. Һаҙыев.

**МОНТА́Ж** [*рус.* ‹ *фр.*] *и.* **1.** Машина һәм төрлө ҡорамалды билдәле бер план һәм һыҙма буйынса әҙер деталдәрҙән йыйып, ҡороп ҡуйыу эше. *Монтаж мастерскойы. Монтаж эше. Монтаж схемаһы.*

**2.** Әҙәби йәки башҡа төр өҙөктәрҙән бер йөкмәткегә һалып төҙөлгән йыйылма. *Музыкаль монтаж. Әҙәби монтаж.* ■ *«Йәмле Ағиҙел буйҙары» тигән поэма буйынса әҙерләнгән әҙәби-музыкаль монтаж кисәне бик төрләндерҙе.* «Башҡортостан уҡытыусыһы», 1965, № 4.

**3.** *кино* Фильм өсөн төшөрөлгән кадрҙарҙан кинотаҫма төҙөү процесы.

**МОНТАЖЛАНЫУ** *ҡ. төш. ҡар.* **монтажлау.** *Монтажланған фильм.*

**МОНТАЖЛАТЫУ** *ҡ. йөкм. ҡар.* **монтажлау.**

**МОНТАЖЛАУ** *ҡ.* **1.** Монтаж (1 мәғ.) яһау. *Агрегатты монтажлау. Насосты монтажлау. Стенд монтажлау.*

**2.** *кино* Фильм өсөн төшөрөлгән кадрҙарҙан кинотаҫма төҙөү. *Фильм монтажлау.*

**МОНТАЖЛАУСЫ** *и. ҡар.* **монтажсы.**

**МОНТАЖЛАШЫУ** *ҡ. урт. ярҙамл. ҡар.* **монтажлау.**

**МОНТА́ЖНИК** *и. ҡар.* **монтажсы.**

**МОНТАЖСЫ** *и.* Монтаж (1 мәғ.) менән шөғөлләнгән эшсе; монтажлаусы. *Монтажсылар бригадаһы.* ■ *Ғәҙәттә беҙ, монтажсылар, арматураларҙы йыйып монтажлап бөтәбеҙ ҙә, шунан пуско-наладчиктарға тапшырып, икенсе объектҡа күсә торғайныҡ.* Р. Солтангәрәев.

**МОНТАЗИР** [*ғәр.*] *с. иҫк. кит.* Зарығып көткән, өмөт менән көткән. *Инде байҙың урыны түрҙә, юғары, ни һөйләй, тип, монтазир халыҡ бары.* Ш. Тульвинский. *Саф күңелдәр, йәшле күҙҙәр рәхмәтеңә монтазир.* М. Ғафури.

**МОНТАР** [*фарс.*] *и. иҫк. кит.* Аҡмай ятҡан һыуҙа барлыҡҡа килгән бысраҡ.

● *Аҡҡан һыуҙа монтар юҡ, ташҡын кисмәҫ толпар юҡ.* Әйтем.

**МОНТАРЛАУ** *ҡ. иҫк. кит.* Кер, бысраҡ тейҙереү; бысратыу.

**МОНТАҺА** [*ғәр.*] *и. иҫк. кит.* Аҙаҡ, сик.

**МОНТЁР** [*рус.* ‹ *фр.*] *и.* **1.** Машина һәм ҡорамалдарҙы монтажлау менән шөғөлләнгән кеше; монтажсы. *Монтёрҙар бригадаһы.*

**2.** Электр үткәреү, электр ҡорамалдарын ҡуйыу менән шөғөлләнгән белгес; электромонтёр. *Ауылға монтёрҙар килде. Электр үткәрәләр.* Ф. Әсәнов.

**МОНТЁРЛЫҠ** *и.* Монтёр эше, монтёр һөнәре. *Монтёрлыҡҡа уҡыу.*

**МОНТОҠ** *и. диал.* Мөнтәлеп бөткән нәмә. *Ботаҡ аҫтында монтоҡ, ҡойроғо сонтоҡ.*

**МОНТӘҠИД** [*ғәр.*] *и. иҫк. кит.* Тәнҡитсе. *Буржуазия тәрилкәһен ялап йөрөгән әҙиптәр, мөхәрирҙәр вә монтәҡидтәр .. синфи көрәште, әһле фоҡараның синфи аңын томаларға маташа.* З. Шәрҡи.

**МОНУМЕ́НТ** [*рус.* ‹ *лат.*] *и.* Оло ваҡиға йәки күренекле шәхестәр хөрмәтенә һалынған архитектура йәки скульптура ҡоролмаһы; һәйкәл. *Өфөлә Башҡортостандың рус дәүләтенә үҙ ирке менән ҡушылыуының 400 йыллығы хөрмәтенә Дуҫлыҡ монументы ҡуйылды.* «Совет Башҡортостаны», 1966, 13 март.

**МОНУМЕНТАЛЬ** [*рус.* монументальный] *с.* **1.** Ҙурлығы, мөһабәтлеге менән тәьҫир итерлек. *Монументаль бина.*

**2.** Ҙур, тәрән йөкмәткеле, киң күләмле. *Монументаль хеҙмәт. Монументаль тикшеренеү.* ■ *Һ. Дәүләтшинаның халыҡ тормошо тураһындағы монументаль роман тыуҙырыуы — ысын мәғәнәһендә ижади героизм ул.* Ғ. Хөсәйенов.

**3.** *сәнг.* Мөһабәтлеге менән айырылып торған һәм грандиоз формаларҙа дөйөмләштереп бирелгән. *Монументаль сәнғәт. Монументаль скульптура.*

**МОҢ** *и.* **1.** Борсоп торған, тынғы бирмәгән уй; хәсрәт, ҡайғы. *Башҡа моң төшөү. Моңға ҡалыу.* ■ *Моңло бала түгел инем, моңдар төштө башыма* (Халыҡ йырынан). / Һағыныуҙан, юҡһыныуҙан тыуған ауыр кисереш; һағыш. *Моңдо таратыу.* ■ *Күҙҙәрендә һағыш моңо ине, ә йөҙөндә тәрән борсолоу.* Ғ. Байбурин. *Һағынып ҡына яҙып хаттар яҙҙым, эскенәйем тулы моң менән* (Халыҡ йырынан).

**2.** Күңелде елкендергән, күңелдә нескә хистәр уятҡан аһәңле тауыш, көй. *Йыр моңо. Ҡурай моңо. Гармун моңо.* ■ *Берҙән бер көндө, көтмәгәндә Дим буйҙарын моңға күмеп, кемдер тальянын һыҙҙырып ебәрҙе.* Ф. Рәхимғолова. *Мәтәл [ауыл] бит ул башҡорт хыялының ерҙе ярып сыҡҡан бер моңо.* Р. Шәкүр. / Әйтелеш ыңғайына килтерелгән аһәңле тауыш; көйлө, матур әйтелеш; музыкаллек. *Башҡорт теле бик бай, ягымлы тел. Башҡорт теленең һөйләү матурлығы, моңо бар.* З. Иғдәүләтов.

**3.** *р. мәғ.* Һағыш ҡатыш моңһоулыҡ менән. *Былар [ҡарабаш турғайҙар] бөтәһе лә тыуған-үҫкән ояларына менән бәхилләшеп моң ғына осоп киттеләр.* «Ағиҙел», 1986, № 8.

□ **Моң булыу** берәй нәмә юҡлыҡтан аптырау; зар булыу. **Моң итеү** нимәгәлер зар иттереү; мохтажлыҡ кисертеү. *Атаһы булмаһа ла, улын Рәмилә еңгә моң итеп аҫраманы. Артыҡ егәрле, бөтмөр ине. Улы өсөн талпынып йәшәүен бәхет һананы.* К. Кинйәбулатова.

● *Арпа еймәҫ арғымаҡ ҡупырыҡҡа моң булыр.* Мәҡәл. *Йоҡо бесәйгә генә моң.* Әйтем. *Һоло ашамаҫ арғымаҡ япраҡҡа моң булған.* Мәҡәл. *Һәр ҡоштоң үҙ моңо бар.* Әйтем. *Яҡшы әҙәмдә ҡон булмаҫ, яман әҙәмдә моң булмаҫ.* Әйтем.

**МОҢАЙТЫУ** *ҡ.* Ауыр уйға, ҡайғыға төшөрөү; яманһыулатыу. *Һайрамасы, һары һандуғасым, йөрәгемә үтә тауышың, моңайтмасы, һары һандуғасым, ташып бара минең һағышым* (Халыҡ йырынан).

**МОҢАЙЫУ** *ҡ.* **1.** Ауыр уй, ҡайғы-һағыштан бойоғоу; яманһыулау. *Заятүләк үҙенең тыуған ерен һағынып бойоға, моңая башлай.* «Заятүләк менән Һыуһылыу».

**2.** Тәрән, нескә тойғо менән йырлау йәки көйләү. *Алпамыша бик ҡайғырған. Ҡурайын алып, тағы моңайырға тотонған.* «Алпамыша».

**МОҢАЙЫШЫУ** *ҡ. урт. ҡар.* **моңайыу.** *Моң-һағыштан алланғанмы Ырғыҙ сәсе — ҡылғандар? Ниңә улар моңайышып, һағайышып ҡалғандар?* Р. Ғарипов.

**МОҢДАШ** *и.* Моңо, ҡайғыһы уртаҡ булған кеше йәки бер нәмә. *Бында килгәс, ул [ҡарт] бигерәк тә Әхмәҙулла менән серҙәш һәм моңдаш булып китте.* М. Ғафури. *Ялп-ялп иткән ябалаҡ кемгә юлдаш булмаған? Ҡырҙа үҫкән төҙ ҡурай кемгә моңдаш булмаған* (Ҡобайырҙан).

● *Алйот юлдаш булмаҫ, ишәк моңдаш булмаҫ.* Мәҡәл. *Ҡурҡаҡ менән юлдаш булма, көйһөҙ менән моңдаш булма.* Мәҡәл.

**МОҢ-ЗАР** *и. йыйн.* Ауыр кисереш, ҡайғы-хәсрәт; аһ-зар. *Тыңланым мин юҡһыл ил халҡымдың, ас халҡымдың ҡайғы, моң-зарын.* Б. Ишемғол. *Ил һис тә һил түгел. Ил ауыҙына иләк ҡаплап та булмай. Моң-зар менән бергә үсасыу ауаздары, шомло хәбәрҙәр ишетелә.* Ғ. Хөсәйенов.

**МОҢЛАНДЫРЫУ** *ҡ.* **1.** Ауыр уй һалып бошондороу; яманһыулатыу. *Йәрһеҙ инем — уйһыҙ инем, һин генә уйландырҙың, уйландырҙың, моңландырҙың, күңелде нурландырҙың.* Х. Назаров.

**2.** *эйһ. ф. ҡар.* **моңланыу.** *Һөйгәнемдән айырылһам, бигерәк моңландыра* (Халыҡ йырынан).

**3.** Моңло (2 мәғ.) иттереү. *Кемдеңдер моңландырып оҙон көйгә гармун уйнап ебәргәне ишетелде.* М. Тажи.

**МОҢЛАНЫУ** *ҡ.* **1.** Ауыр уй, ҡайғы, һағыш кисереп бойоғоу; моңайыу, яманһыулау. *Белмәйем инде, ниңәлер гел моңланам. Ҡайғы-хәсрәт, моң вә зарлыҡтар менән.* Ш. Бабич.

**2.** Тәрән, нескә хис менән үҙ алдына йырлау йәки көйләү; моңайыу. *Барсынһылыуҙың бөтә нәмәһе етеш, күңеле генә урынында түгел, ти, йырлап, моңланып ғүмере үтә, ти.* «Алпамыша». / Күңелгә ятышлы ауаздар сығарыу; һайрау. *Эскенәйең бошһа, сыҡ яланға, төрлө ҡоштар шунда моңлана* (Халыҡ йырынан).

**МОҢЛАУ** *ҡ. һөйл.* Моңло (2 мәғ.) итеп үҙ алдына йырлау, көйләү, моңланыу. *Һағынып үлгәндәрҙе окоптарҙа ҡайғы менән моңдар моңланым.* Б. Ишемғол. *Йырлайҙыр ҙа егет ай моңлайҙыр, шишмәләрҙәй моңо ҡайнайҙыр* (Халыҡ йырынан).

**МОҢЛО** *с.* **1.** Аһ-зарлы, ҡайғы-хәсрәтле. *Моңло яҙмыш. Моңло тормош.* ■ *Илдең нурлы булғаны — илдә батыр булғаны, илдең моңло булғаны — дошман килеп тулғаны* (Ҡобайырҙан).

**2.** Һағышы булған, һағыш хистәрен кисергән. *Моңло егет.* ■ *Үткән яҙғы саҡтар иҫемә төшһә, ташый, тула моңло күңелем.* Ш. Бабич. .. *Зарлы кеше йәшен ағыҙғанда, моңло кеше йырҙар сығарған.* Й. Солтанов. / Һағыш, юҡһыныу тойғоһо уятҡан; һағышлы. *Моңло минуттар.* ■ *Шылтыр-шылтыр .. тауҙан шишмә төшкән, һауа тулған сирень еҫенә, әллә нисек, бигерәк шундай төндәр үҙе моңло, үҙе йәмле лә.* Ғ. Сәләм. / Һағыш, юҡһыныу белдергән; моңһоу. *Моңло ҡараш. Моңло тауыш.* ■ *Бейек сопкаларҙың билен ярып, Лазо станцияһын уҙғанда — паровоздар моңло гудок бирә, машинистар ауыр һулайҙар.* Р. Ниғмәти. *Ҡараш һайын серле оскон сәсә моңло, уйсан ҡара күҙҙәрең!* Д. Юлтый.

**3.** Күңелде елкендергән, күңелдә һағыш уятҡан; матур яңғырашлы. *Моңло көй. Моңло булып ишетелеү. Моңло итеп йырлау.* ■ *Болон буйлап килгән моңло йырҙар йөрәктәргә дәрттәр*

*түгәләр!* Ғ. Мәсғүт. *Ишеткәндә моңло курайҙарын йөрәгемә моңдар бөркөлә.* Ш. Бабич. / Моңайырға, йырларға әүәҫ; моңға, хискә бай. *Моңло кеше. // Моңло йырлау.* ■ *Бигерәк тә моңло инде беҙҙең халыҡ. Башҡынаһын ҡырын һалып, күкрәккәйен киреп бер йырлап ебәрһенме — донъяңды онотаһың.* Д. Бүләков. *Урал ғына ҡошо ай һандуғас, ат менгәндә моңло һайраның* (Халыҡ йырынан).

● *Моңло кеше зарын һөйләгәндә, моңһоҙ кешенең башы ауырта.* Әйтем.

**МОҢЛО-ЗАРЛЫ** *с. йыйн.* Ҡайғы-хәсрәтле, аһ-зарлы. *Тейешһеҙгә түгелә икән ҡайнар йәшем. Моғайын, ул моңло-зарлы булғанғалыр гәзиз башым.* К. Кинйәбулатова.

**МОҢЛОЛОҠ** *и.* **1.** Моңһоулыҡ. *Бер моңлолоҡ гүйә бар йыһанда, ҡайҙа барма йөрәк һағышлы.* Н. Нәжми.

**2.** Моңло (2 мәғ.) булыу (йырға, тауышҡа ҡарата). *Көйҙөң моңлолоғо.* ■ *Ғүмеремдә мине күп иҫертте моңлолоғо улар йырының* М. Хәй.

**МОҢСАН** *с.* Уй-моң менән тулған; һағышлы, моңсол. *Рәхмәт һиңә, моңсан йөрәк, түбәнселектән ерәндең, керләнеүҙән ҡурҡа-ҡурҡа, саф булырға өйрәндең.* Ҡ. Даян.

**МОҢСОЛ** *с. кар.* **моңсан.** *Йылға буйын маҡтай-маҡтай, моңсол ҡоштар йыр һуҙа.* С. Әлибаев.

**МОҢ-ҺАҒЫШ** *и. йыйн.* Күңелдәге төрлө ауыр тойғо; аһ-зар, ҡайғы-хәсрәт. *Шаулама; ҡамыш, сығарма тауыш, унһыҙ ҙа миндә моң-һағыш!* Ғ. Мәсғүт.

**МОҢҺОҘ** *с.* **1.** Хәстәр, мәшәҡәт белмәгән, һис нигә иҫе китмәгән; вайымһыҙ, бошмаҫ, ғәмһеҙ. *Моңһоҙ кеше.* ■ *[Аҡбулат:] Өйрәнсекте әйтәм, бигерәк моңһоҙ нәмә булған икән. Өйрәнеп ҡалырға ла уйламаған.* З. Биишева. / Ҡайғы-хәсрәте булмаған; ҡайғыһыҙ. *Ҡарсығаҡай кеүек моңһоҙ инем, ҡайғы-хәсрәт төштө башыма* (Халыҡ йырынан).

**2.** Моңо (2 мәғ.) булмаған; көйһөҙ. *Моңһоҙ тауыш.*

● *Моңло кеше зарын һөйләгәндә, моңһоҙ кешенең башы ауыртҡан.* Әйтем. *Моңһоҙҙоң да бер йыры була.* Әйтем.

**МОҢҺОҘЛОҠ** *и.* Моңһоҙ (1 мәғ.) булыу сифаты; вайымһыҙлыҡ, ғәмһеҙлек. *Моңһоҙлоҡҡа юл ҡуймау.* ■ *Бөгөн йәнле эш тирәһендә һүҙ буҡҡаһы бешереүгә, инертлыҡҡа, формализмға, моңһоҙлоҡҡа ҡаршы ҡыйыу көрәшеү беренсе дәрәжәләге бурыс булып тора.* «Совет Башҡортостаны», 1986, 27 май.

**МОҢҺОРАУ** *к. кар.* **моңайыу.** *Башҡаса һис борсомам һине [йөрәк] моңһорап, булһа ла ғүмер өҙөлгән йыр һымаҡ.* С. Ҡудаш.

**МОҢҺОУ** *к. кар.* **моңайыу** 1. *Юғалтҡандай иң-иң ҡәҙерлемде, тирә-яҡҡа моңһоп ҡараным.* Х. Ҡунаҡбай.

**МОҢҺОУ** *с.* **1.** Күңелһеҙ уй-тойғо кисергән; бойоҡ. *Моңһоу кеше. Моңһоу булыу. Моңһоу итеп йылмайыу.* ■ *Ул [Гөлбикә] һәр саҡ яңғыҙ, һәр саҡ моңһоу. Уның да ғүмере зая уҙа бит.* З. Биишева. // *Ул [Зәкиә] гел моңһоу йөрөй.* Т. Килмөхәмәтов. / Күңелһеҙлек, төшөнкөлөк сағылдырған; бойоҡ. *Моңһоу төҫ.* ■ *Йәйге ҡояш нуры уйнай һымаҡ әсәйемдең моңһоу йөҙөндә.* Ғ. Рамазанов. *Бригадирҙың йөҙө артыҡ борсоулы, күҙҙәрендә ниндәйҙер моңһоу шәүләләр.* Ш. Насыров.

**2.** Күңелһеҙ, ауыр тойғо менән һуғарылған; күңелгә моң һалған. *Моңһоу тауыш. Моңһоу тынлыҡ.* ■ *Кисә башҡорт иле көҙгө төндә күшеккән, буш моңһоу ер ине.* Ғ. Әмири. *Таң турғайы һайрай, мин йырлайым, һабан тотоп, моңһоу тынлыҡта.* Т. Йәнәби.

● *Бала күрмәгән өй — ҡош һайрауын ишетмәгән моңһоу урман.* Әйтем.

**МОҢҺОУЛАНЫУ** *к.* **1.** Һағышҡа бирелеү, күңелһеҙләнеү; уйға батыу. *Моңһоуланып ултырыу. Моңһоуланып йөрөү.* ■ *Марат моңһоуланып ярым емерек бураға, имгәнгән ҡуласаға ҡараны.* Й. Солтанов.

**2.** Моңһоу төҫ алыу, моңһоуға әйләнеү. *Күкрәп торған ҡырҙар моңһоуланды.* С. Исмәғилев.

**МОҢҺОУЛАТЫУ** *к.* Моңһоу (1 мәғ.) төҫкә индереү; моңһоу итеү. *Батҡаҡлы юлдың ат тояҡтарынан шабырҙауы, ҡара урман шауы уйҙы йәнә моңһоулата.*

**МОҢҺОУЛЫҠ** *и.* Күңелһеҙ, яманһыу тойғо; һағыш. *Моңһоулыҡ тойғоһо.* ■ *Институт сәхнәһендәге диплом спектакле, алҡыштар, сәскәләр, ҡотлауҙар, туған институт менән хушлашыуҙан булған моңһоулыҡ — барыһы ла артта ҡалды.* «Совет Башҡортостаны», 1986, 9 июль.

**МОПЁД** [*рус.*] *и.* Моторлы велосипед. *Мопед менән йөрөү.*

**МОРА́ЛЬ** [1] [*рус.* ⟨ *фр.*] *и.* **1.** Ижтимағи тәртип ҡағиҙәләре; әхлаҡ. *Социалистик мораль — принциптарҙа һәм нормаларҙа кәүҙәләндерелгән тәртип ҡағиҙәләре. Был тәртип ҡағиҙәләре йәмғәт фекеренең көсө менән гарантияланған ижтимағи мөнәсәбәттәрҙе регулярлаштыра.* Д. Вәлиев. *Мораль йәки әхлаҡ — кешеләр ҡылығының нормалары, принциптары һәм ҡағиҙәләренең йыйылмаһы, улар кешеләрҙең үҙ-ара һәм йәмғиәткә мөнәсәбәттәрен һәм бурыстарын билдәләй.* Ш. Кильдияров.

**2.** Ғибрәтле нәтижә; һабаҡ. *Мәҫәл йыш ҡына мораль менән ослана, бында автор әҫәрҙең төп идеяһын аңлатып бирә.* К. Әхмәтйәнов.

**МОРАЛЬ** [2] [*рус.* моральный] *с.* **1.** Моралгә (1 мәғ.) мөнәсәбәтле; әхлаҡи. *Мораль сифат.*

**2.** Кешенең рухи донъяһына мөнәсәбәтле. *Мораль ярҙам.*

**МОРАЛЬ-ПОЛИТИК** [*рус.* морально-политический] *с.* Ниҙең дә булһа мораль һәм политик нигеҙен тәшкил иткән.

**МОРАЛЬ-ЭТИК** [*рус.* морально-этический] *с.* Ниҙең дә булһа мораль һәм этик нигеҙен тәшкил иткән. *Мораль-этик нигеҙҙәр.*

**МОРАТ** [*ғәр.*] *и.* **1.** Ниәт иткән нәмә; теләк-маҡсат. *Моратҡа етеү. Моратҡа әйә булыу.* ■ *Ирештем дә кеүек моратыма, хәҙер миңә башҡа ни кәрәк?* Н. Нәжми.

**2.** (баш хәреф менән) Ир-ат исеме.

● *Сабыр иткән моратына еткән.* Мәҡәл.

**МОРАТО́РИЙ** [*рус.* ⟨ *лат.*] *и. эк.* Ниндәйҙер көтөлмәгән хәл (һуғыш, кризис, һәләкәт һ. б.)

рҡаһында алдан билдәләнгән түләмдең хөкүмәт арафынан кисектерелеше.

**МОРДВА** *и.* Мордвияның төп халҡын тәшил иткән милләт һәм шул милләттең бер ешеһе (уғыр-фин телдәренең береһендә һөйәшә). *Мордва халҡы. Мордва теле. Мордва атыны.*

**МОРДВАСА** *р.* **1.** Мордва телендә. *Мордваса өйләшеү.*

**2.** Мордваларға хас рәүештә. *Мордваса кейеү.*

**МОРҘАР** [*фарс.*] *и. иҫк.* **1.** Үләкһә.

**2.** *күсм.* Ҡәбәхәт, боҙоҡ, ерәнгес кеше. *Морҙарҙан үс алыу. // Морҙар кеше.* ■ *Китте.., мәгәр морҙар бысраҡ ҡулдар аша китте. Тыныс бул йәш шағир.* М. Ғафури.

♦ **Морҙар китеү** үлеү. *Ниндәй алтын тәхет емерелмәне, ниндәй шаһтар морҙар китмәне!* М. Ғафури. **Морҙар киткере** әрләгәндә әйтелә. — *Ҡолмырҙа, Ырыҫмырҙа!.. һай, морҙар ғына киткерҙәре!* (Көләмәстән). **Морҙар үлеү** үҙеңде үҙең үлтереү.

● *Ҡассап күп булһа, хайуан морҙар китер.* Мәҡәл.

**МОРҘАРЛЫҠ** *и. иҫк.* **1.** Морҙар (1 мәғ.) булыу.

**2.** *күсм.* Ҡәбәхәтлек, бысраҡлыҡ; әшәке эш. *Морҙарлыҡ ҡылыу.*

**МОРЖ** [*рус.*] *и.* **1.** Оҙон ҡаҙыҡ тешле, оҙон мыйыҡлы, йөҙгөс аяҡлы эре һөтимәр диңгеҙ хайуаны. *Инә морж. Морж балаһы. Морж тиреһе.*

**2.** Ҡыш көнө боҙло һыуҙа йөҙгән кеше. *Морждар ярышы.*

**МО́РЗЕ** [*рус.*] (*баш хәреф менән*) *и.* **1.** (*йәки* **Морзе азбукаһы**) Телеграф аппараты аша тапшырыу өсөн йәтешләп, нөктә-һыҙыҡ менән билдәләп төҙөлгән хәреф һәм һандар системаһы. *Көнө буйы морзе өйрәнеп, төндә лә телеграфса «ти-ти-та, ти-ти» тип ҡысҡырып уяна торғайныҡ.* «Совет Башҡортостаны», 1965, 9 май.

**2.** (*йәки* **морзе аппараты**) Морзе азбукаһы менән хәбәр тапшыра торған ябай аппарат. *Вокзал эсендә йәш телеграфист егет морзены туҡылдата.* А. Таһиров.

**МОРЗИ́СТ** [*рус.*] *и.* Морзе аппаратында эшләгән телеграфист.

**МОРОЖНЫЙ** [*рус.* мороженое] *и.* Ҡаймаҡҡа йәки һөткә емеш һуты ҡушып, туңдырып яһалған аҙамлыҡ; туңдырма. *Шоколадлы морожный. Морожный ашау.*

**МОРОН** *и.* **1.** Хайуандарҙың ауыҙ һәм танау өлөшө; томшоҡ. *Эт мороно.* ■ *Бара торғас ҡырмыҫҡалар айыуҙы бөтөнләй уҡ һырып алғандар һәм уның мороно эсенә уҡ инеп киткәндәр.* Ж. Кейекбаев. Ә *Шоңҡар, ҡойроғон һуҡҡылып, иҫнәне һәм оҙон телен сығарып, моронон ялаштырып ҡуйҙы.* С. Ҡулибай. *Бесәй моронон тығып ятһа, һыуыҡ була.* Һынамыш. / *диал.* Танау. *Уның [Сәлимовтың] моронона ауыл өйҙәре мөрйәләренән сыҡҡан тиҙәк төтөнөнөң әскелтем еҫтәре килеп бәрелде.* С. Агиш. *Морон ҡысыһа, ирен тартһа, ҡунаҡ килә, ҡустәнәс ашайһың.* Һынамыш.

**2.** Ҡайһы бер бөжәктәрҙә ҡаяу рәүешендәге аҙыҡланыу ағзаһы. *Себен мороно. Серәкәй мороно.* ■ *Еҫте, тәмде бал ҡорттары морондары менән генә түгел, аяҡтары менән дә, тәндәрендәге бөтә төктәре менән дә тоялар.* Ф. Иҫәнғолов.

**3.** Фил һәм башҡа хайуандарҙың оҙон булып үҫкән томшоғо. *Тапир мороно.* ■ *Фил икмәкте мороно менән эләктереп алып, ауыҙына ҡапты.* Ә. Байрамов.

**4.** Һауыт-һабаның шыйыҡлыҡты ағыҙа торған осло өлөшө; һемәк. *Сәйгүн мороно. Моронло ҡунаҡ.* ■ *Өләсәйем самауыр моронон бороп ҡуйырға ла онотҡан, өҫтәл өҫтө ҡайнар һыу менән тулды.* Р. Низамов.

**5.** Төрлө нәмәнең ослайып алға сығып торған өлөшө. *Ҡәмә мороно. Самолёт мороно. Пароход оҙон ғына гудок бирҙе лә, мороно менән аҡ тулҡындарҙы яра-яра, йөрөшөн шәбәйткәндән-шәбәйтте.* М. Тажи.

**6.** Ҡоро ерҙең һыуға ослайып сығып торған өлөшө. *Канин мороно. Челюскин мороно.* / Тауҙың ослайып алға сығып торған өлөшө. *Туҙан туҙҙырып килгән машинаны ауыл осондағы тау моронона еткәс, кузовтағы кеше кабинаға һуға башланы.* Р. Солтангәрәев.

♦ **Күҙ мороно** *ҡар.* **күҙ 1. Ҡаты морон** сусҡаның ситләтелгән исеме. [*Фәҙелшин:*] *Сусҡасылыҡ фермаһына кеше табылманы. Ул саҡта бит ҡаты морондарҙы башҡорт ауылына тәү башлап килтереү ине.* Ҡ. Ибәтуллин. **Моронға сиртеү** *диал.* танауға сиртеү (*ҡар.* **танау**). **Морон төбө** иң яҡын урын, эргә, йәнәш ер. [*Арҫланов:*] *Малайҙар немецтың морон төбөнә барып бесән сабып ҡайттылар.* Ә. Кирәй. **Морон төртөү** 1) шытып сығыу. *Ағастар бөрөләнгән, ҡоштар оя яһаған, умырзаялар морон төртөп сыҡҡан, йылғалар ташҡан ай.* И. Абдуллин; 2) кемдеңдер ярҙамына таяныу; кемгәлер һыйыныу. *Беҙҙең ошо һуңғы ышаныста аҡламаһаң бүтән ергә барып морон төртөрмөн тип уйлама.* Н. Мусин; 3) *диал.* *ҡар.* **моронлау 1. Морон тығыу** кәрәкмәгән ергә ҡыҫылыу. [*Шаһнияз — врач хаҡында:*] *Ауылға килеүе яңы, морон тыҡмаған ере юҡ.* Ә. Мирзаһитов.

● *Маҡтансыҡтың мороно ҡуҡтә.* Әйтем. *Үлер ваҡыты етһә, себендең мороно үткерләнер.* Әйтем.

**МОРОНДОҠ**[1] *и.* **1.** Тешләй алмаһын өсөн эт йәки башҡа йыртҡыс йәнлектең моронона кейҙерә торған нәмә. *Морондоҡ кейҙереү.* ■ *Иркәбай килде лә, бүрегә морондоҡ кейҙереп, ауыҙлыҡлап алды. Шунан ғына ҡороҡтоң ебен бушатты.* Ғ. Әмири.

**2.** Етәкләп йөрөү өсөн дөйәнең, үгеҙҙең моронона тишеп кейҙерелә торған таяҡ йәки дүңгәләк.

**3.** Инәһен иммәһен өсөн быҙау, бәрәстең моронона кейҙерелә торған сәнскеле нәмә; борғаҡ. *Морондоҡ кейҙереү. Морондоҡ һалыу.*

**4.** *диал.* Моронһалыҡ. *Ат түгел, ә аждаһа. Яҡын барырлыҡ түгел, морондоҡҡа һоло ла һалып булмай. Һалһаң да ашамай [тине сержант Гусев].* «Совет Башҡортостаны», 1970, 21 февраль.

**МОРОНДОҠ**[2] *и. диал. ҡар.* **мөшкә 1.**

**МОРОНДОҠ**[3]: **морондоҡ әсәй** *этн.* боронғо йола буйынса, ситтән төшкән килендең арала-

шып йәшәү өсөн бүләк биреп яһап алған әсә кешеһе; үкел әсәй; ҡиәмәтлек әсәй. *Морондоҡ әсәй итеү. Морондоҡ әсәй булыу. Морондоҡ әсәй яһау.* ■ *Агай-энеһенән берәүһенең ҡатынын киләсәк киленгә морондоҡ әсәй итеп билдәләп ҡуйырҙар. Ул.. аш-һыу әҙерләшеп.. килендең килеүен көтөп тора..* М. Буранғолов. **Морондоҡ ҡыҙ** *этн.* йола буйынса, морондоҡ әсәгә ҡыҙ итеп алынған ситтән төшкән килен кеше; ҡиәмәтлек ҡыҙ, үкел ҡыҙ. *Морондоҡ ҡыҙ булыу. Морондоҡ ҡыҙ итеү. Морондоҡ ҡыҙ яһау.* **Морондоҡ атай** морондоҡ әсәнең ире. **Морондоҡ кейәү** морондоҡ ҡыҙҙың ире.

**МОРОНДОҠЛАНЫУ** *к. төш. ҡар.* **морондоҡлау**[2]. *Әрәмәлеккә ҡара кәзә арҡанлап ҡуйылған. Тирәһендә морондоҡланган ике кәзә бәрәсе уйнап йөрөй.* И. Ниғмәтуллин.

**МОРОНДОҠЛАУ** *к.* Морондоҡ[1] (1—3 мәғ.) һалыу, кейҙереү. *Колхоз идараһы алдында морондоҡлап алған бүреһен тотоп, кәпәсен елкәһенә сөйә кейеп, мөштөм генә ҡарап, Иркәбай тора.* Ғ. Әмири.

**МОРОНЛАНЫУ** *к. ҡайт. ҡар.* **моронлау**. *Рәхмәт инде һеҙгә моронланып, тыуып килгән яңы көнөмә!* М. Уразаев.

**МОРОНЛАУ** *к.* **1.** Йомортҡа ҡабығын эстән тишеп, морон күрһәтеү (сығып килгән себеш-бәпкә, ҡош балаһына ҡарата). *Йомортҡалар моронлай башлагас та оло күгәрсендәрҙең тештәрендә аҡ матдә барлыҡҡа килә. Бына ошо «һөт» менән күгәрсендәр балаларын туйҙыра ла инде.* «Совет Башҡортостаны», 1976.

**2.** Орлоҡтан шытып бәбәк барлыҡҡа килеү. *Әһә, ана орлоҡтар шытҡандар. Оҙаҡламай ерҙе төртөп моронларҙар, япраҡ ебәрерҙәр.* Р. Низамов. *Йәшел ебәк түгел ул — орлоҡ төшкән урындан ҡара бәрхәтте сигеп ужым сыга моронлап.* Ғ. Ғүмәр.

**3.** *күсм.* Башланғыс алыу, донъяға килә башлау. *Яҙыусыларҙың күпселеге поэзия өлкәһендә эшләй, проза, айырыуса драматургия жанры яңы моронлап кына килә.* Б. Бикбай.

**4.** *күсм. диал. ҡар.* **оялау** 2.

**МОРОНСА** *и. диал. ҡар.* **морондоҡ** 1—3. *Эткә моронса кейҙереү.*

**МОРОНҺАҠ** *и. диал. ҡар.* **морондоҡ** 3. *Башмаҡҡа моронһаҡ кейҙереп ҡуй, әсәһен имеп йөрөмәһен.* М. Тажи.

**МОРОНҺАЛЫҠ** *и.* Йүгәндең морон өҫтөнән арҡыры торған өлөшө. *Моронһалыҡ кейҙереү.*

**МОРС** [*рус.*] *и.* Емеш-еләк һутынан яһалған һалҡын эсемлек. *Алма морсы. Еләк морсы. Ҡарагат морсы. Морс эсеү.*

**МОРТ** [*фарс.*] *и. иҫк.* Мыйыҡ. *Арыҡланган, кипкән, хәле киткән, нәжес-бысраҡ ҡатҡан мортона.* Ш. Бабич.

● *Мортона асыуы килеп йөрөгәндә, һаҡал сыҡҡан.* Әйтем.

**МОРТИ́РА** [*рус.* ‹ *гол.*] *и.* Нығытмаларҙы емертеү өсөн тәғәйенләнгән ҡыҫҡа көбәкле туп. *Ялан мортираһы. Яр буйы мортираһы.* ■ *Йүнәлеште салыштырып атҡан мортира снарядтары төшөп ярылды.* А. Таһиров. *Тупсы Петр Алексеевич туп, мортиралар менән атышты алдагы һырттан башламаҡ булды.* Ғ. Хөсәйенов.

**МОРФЕ́МА** [*рус.* ‹ *гр.*] *и. лингв.* Һүҙҙең лексик йәки грамматик мәғәнәгә эйә булған киҫәге (*мәҫ.* тамыр, ялғау).

**МО́РФИЙ** [*рус.* ‹ *гр.*] *и.* Ауыртҡанды баҫа һәм йоҡлата торған наркотик матдә (билдәле күләмдән артығы ағыу була). *Морфий еҫкәү.* ■ *Военком үтә палаталар буйлап, хәл һорашып, йәки йыуатып, ҡай берәүҙе морфий баҫындыра, ҡай берәүҙе кәрәк уятыу.* Х. Ғиләжев.

**МОРФИНИ́ЗМ** [*рус.*] *и.* Кешенең морфийға ғәҙәтләнеүе; наркоманияның бер төрө. *Морфинизм менән көрәшеү.*

**МОРФИНИ́СТ** [*рус.*] *и.* Морфинизм менән ауырыған кеше.

**МОРФОЛОГИК** *с.* Морфологияға (2 мәғ.) мөнәсәбәтле. *Морфологик анализ. Морфологик категория. Морфологик состав.*

**МОРФОЛО́ГИЯ** [*рус.* ‹ *гр.*] *и.* **1.** Организм, ағза һәм тупраҡ төҙөлөшөн өйрәнә торған фән. *Эксперименталь морфология. Сагыштырма морфология.* / Организм, ағза һәм тупраҡ төҙөлөшө. *Үҫемлек һабагы морфологияһы. Тупраҡ морфологияһы. Бактерия морфологияһы.*

**2.** Телдәге һүҙ үҙгәреш формалары һәм грамматиканың һүҙ формаларын өйрәнә торған бүлеге. *Башҡорт теле морфологияһы.* ■ *Морфология бүлеге һүҙҙәрҙең үҙгәреше тураһындагы фән һанала һәм ялгауҙар ҡушыу арҡаһында төрлө грамматик категорияларҙың яһалыуын өйрәнә.* Ж. Кейекбаев.

**МОРЯ́К** [*рус.*] *и.* Флотта хеҙмәт иткән кеше. *Хәрби моряк. Сауҙа флоты морягы.*

**МОСАДДАҠ** [*ғәр.*] *и. иҫк. кит.* Ышаныс. *Әнма яҡшы аллага мосаддаҡ ҡайҙа, күҙ һалып хәҡиҡәтен аңлаганда.* Аҡмулла.

**МОСАДДИҠ** [*ғәр.*] *с. иҫк. кит.* Дөрөҫлөгөн иҫбатлаған, ысынлығын раҫлаған. *Мосаддиҡ хәл.*

**МОСАЙ** *и. һөйл.* Оса һөйәге.

**МОСАЛӘХӘ** [*ғәр.*] *иҫк. кит.* Ике араның килешеүе, ярашыуы.

□ **Мосаләхә ҡылыу** килешеү, ярашыу. *Ул заманда [Күсемхан заманында] һарайсыҡта .. ер-һыу ваҡигалары булды. Һуңынан ике жанибтан моҡабил булдылар, сайбан ҡорҙолар. Илсе тотоп шөйлә мосаләхә ҡылдылар.* «Башҡорт шәжәрәләре», 1960.

**МОСАННИФ** [*ғәр.*] *и. иҫк. кит.* Әҫәр ижад итеүсе, китап яҙыусы. *Яҙыптыр мосаннифтар һәр китапҡа, фәҫк һүҙ алынмаҫ, тип, илтифатҡа.* Аҡмулла.

**МОСАУУИР** *и. иҫк. кит.* Һүрәт төшөрөүсе; рәссам. *Ҡуй бумаланды, мосаууир, тәрсем итмә карталар, йәнһеҙ аҡ буҙҙәр күңелдең ҡайгыһын яңырталар.* Б. Мирзанов.

**МОСАФИР** [*ғәр.*] *и. иҫк. кит.* Юлсы, уҙғынсы. *Мосафир таягы.* ■ *[Аяксы:] Кил, мосафир, ултыр әйҙә беҙҙең табынга. Алыҫ юлдан сарсап килгәнһеңдер, ҡымыҙ эсеп ебәр һыуһынга.* Б. Вәлит.

**МОСАФИРХАНА** [*ғәр.* ‹ *фарс.*] *и. иҫк. кит.* Юлсы һәм юлаусылар төшә торған йорт; ҡуналҡа. *Мосафирхана ҙур-ҙур бүлмәләрҙән гибәрәт булып, һәр бер бүлмәһендә лыҡ тулы мосафир, һәр төрлө халыҡ.* М. Ғафури.

**МОСАХАБӘ** [*ғәр.*] *и. иҫк. кит.* Йылы, матур әңгәмә. *Халыҡ сығып бөтөү менән улар [генерал һәм комендант] араһында ысын мосахабә башланды.* И. Насыри.

□ **Мосахабә итеү** (*йәки* **ҡылыу**) дуҫтарса һөйләшеү, әңгәмәләшеү.

**МОСАХАБӘТ** *и. кар.* **мосахабә. Мосахабәт бүлмәһе** һөйләшеп, ял итеп ултыра торған бүлмә. *Сәй мәжлесе тамам булыу берлә мосахабәт бүлмәһенә сыҡтыҡ.* Р. Фәхретдинов.

**МОСИБӘТ** [*ғәр.*] *и. иҫк. кит.* Башҡа төшкән ҡайғы; бәлә. *[Кәрим:] Кемде генә күрһәм дә: «Кәрим ағай, башмаҡ әҙләйһегеҙме? Бик ҙур ҡазалы булғанһығыҙ икән, хәйерле мосибәт булһын инде»,— ти.* Ғ. Ибраһимов.

**МОСОЛМАН** [*ғәр.*] *и.* Ислам динен тотҡан кеше. *Мосолман кешеһе. Мосолман халҡы.* ■ *Йыйын кафыр араһында яңғыҙы бойоғоп килгән бабайға бер мосолманды осратыу бик ҙур ғанимәт булды бугай.* Ғ. Ибраһимов.

**МОСОЛМАНЛЫҠ** [*ғәр.*] *и.* **1.** Ислам дине.
**2.** Мосолман булған хәл. *Мосолманлыҡ, беҙ уйлағанса, күренеш менән генә түгел, бәлки күңел менән була торған эш.* М. Ғафури.

**МОСХӘФ** [*ғәр.*] *и. иҫк. кит.* Ҡөрьән. *Ауырыу янына йыйыла ине мулла, һәр береһе мосхәф алып ҡулына.* С. Яҡшығолов.

**МОСҺОҘ** *с. кар.* **мөсһөҙ.**

**МОТАЛӘ** *и. кар.* **моталәғә.**

**МОТАЛӘҒӘ** [*ғәр.*] *и. иҫк. кит.* Кешенең ниҙелер уҡып, төпсөп өйрәнеүе. *Әлимә үҙенең ауыр ҡайғылы ваҡыттарын уҡыу, моталәғә менән үткәрә.* Д. Юлтый.

**МОТИ́В** [1] *и.* [*рус.* 〈 *фр.*] **1.** Әҙәбиәт һәм сәнғәт әҫәрҙәренең асылын тәшкил иткән фекер, йөкмәтке. *Көрәш мотивы. Фольклор мотивы.* ■ *Хәҙерге башҡорт орнаментында гөл-сәскә мотивтары һәм төрлө геометрик биҙәктәр хакимлыҡ итә.* Н. Бикбулатов.

**2.** *муз.* Көйҙөң ике-өс тауыштан тороп, бер логик баҫым менән берләшкән ябай ритмик берәмеге.

**МОТИ́В** [2] [*рус.* 〈 *фр.*] *и. кит.* Ниндәйҙер эшкә, ҡылыҡҡа килтергән сәбәп, нигеҙ. *Мода иҫке мотивтарҙы үҙләштерә тип әйтеү гәҙел булмаҫ. Иҫке мода яңыһы өсөн таяныу объекты ғына булып тора.* «Совет Башҡортостаны», 1985, 28 декабрь.

**МОТИВИРО́ВКА** [*рус.*] *и. кит.* Ниндәйҙер эш-ҡылыҡты нигеҙләгән сәбәп һәм дәлилдәр. *Геройҙың айырым ҡылыҡтарына психологик мотивировка бирелмәй, унда иҫке динамика бөтөнләй юк тиерлек.* М. Ғималова.

**МОТИВЛАШТЫРЫУ** *к.* Эш-ҡылыҡты, фекерҙе нигеҙләп йәки аҡлап дәлил килтереү; дәлилләү.

**МОТИҒ** [*ғәр.*] *с. иҫк. кит.* **1.** Тыңлаусан. *Мотиғ кеше. Мотиғ булыу.*

**2.** (баш хәреф менән) Ир-ат исеме.

**МОТЛАҠ** [*ғәр.*] *с.* **1.** Һис һүҙһеҙ тейешле; кәрәкле. *Мотлаҡ сифат. Мотлаҡ шарт. Мотлаҡ эш. Мотлаҡ булыу.* ■ *Ремонтты ваҡытында бөтөү мотлаҡ бурыс булып тора.* «Совет Башҡортостаны», 1965, 21 август.

**2.** *р. мәғ.* Бер нәмәгә ҡарамаҫтан, һис һүҙһеҙ, һис шикһеҙ. *Мин мотлаҡ китергә тейеш.* М. Ғафури.

**МОТЛАҠА** [*ғәр.*] *р. иҫк. кит. кар.* **мотлаҡан.** *[Балалар] сабый саҡтан әҙәпһеҙ йөрөп үҫһә, мотлаҡа бер ваҡытта хур булырҙар.* М. Ғафури.

**МОТЛАҠАН** [*ғәр.*] *р. кит.* Бер нәмәгә ҡарамаҫтан, һис һүҙһеҙ, һис шикһеҙ. *[Рогаткин — Әхтәмгә:] Пакетты мотлаҡан иптәш Лениндың үҙенә тапшыр.* В. Исхаков.

**МОТМӘИН** [*ғәр.*] *с. иҫк. кит.* Тынысланған, тыныслыҡ тапҡан. *Мотмәин булыу.*

**МОТОБЫСҠЫ** *и.* Моторлы бысҡы. *Һәр бригадала — бүрәнә һөйрәтеп ташый торған бер трактор, бер ат, ике мотобысҡы, тығыҙ кеше.* «Совет Башҡортостаны», 1965, 16 октябрь.

**МОТОВО́З** [*рус.*] *и.* Эске яғыулыҡлы двигатель ярҙамында эшләгән бәләкәй ҡеүәтле локомотив. *Мотовоз машинисы.* ■ *Нисәмә йылдар буйына сырьены мейестәр эргәһенә лебедкалар менән ташып мataштылар. Хәҙер .. уны мотовоз ташый.* Ә. Вахитов.

**МОТОГО́НКА** [*рус.* мотогонки] *и.* Мотоциклистар ярышы. *Юбилейға арналған мотогонка.*

**МОТОГОНСЫ** *и.* Ярышта ҡатнашҡан мотоциклист. *Мотогонсылар ярышы.*

**МОТОГОНЩИК** [*рус.*] *и. кар.* **мотогонсы.**

**МОТОДРО́М** [*рус.*] *и.* Мотоциклеттар ярышы үткәреү һәм мотоциклдарҙы һынау өсөн яраҡлаштырылған махсус урын.

**МОТОКРО́СС** [*рус.* 〈 *фр.*] *и.* Тигеҙһеҙ юлда үтелгән мотоциклистар ярышы.

**МОТОПЕХО́ТА** [*рус.*] *и.* Хәрәкәт өсөн автомобиль, транспортёр һәм башҡа машина ҡулланған йәйәүле ғәскәр. *Мотопехота полкы.* ■ *Беҙҙең мотопехота часы ҡояш байыр алдынан кескәй генә ҡалаға килеп инде.* М. Кәрим.

**МОТО́Р** [*рус.* 〈 *лат.*] *и.* Һәр төрлө энергияны механик энергияға әйләндерә торған машина; двигатель. *Самолёт моторы. Трактор моторы.* ■ *Мотор бик оҙаҡ тоҡанмай сөскөрөп, торбаһынан ҡара ҡуҫҡыл төтөн сығарып торғандан һуң, теләр-теләмәҫ кенә эшләй башланы ла, тағы һүнде.* З. Хисмәтуллин.

**МОТОРИ́СТ** [*рус.*] *и.* Моторҙар буйынса эшләгән белгес. *Моторист булып эшләү.*

**МОТОРЛАШТЫРЫЛЫУ** *к. төш. кар.* **моторлаштырыу.**

**МОТОРЛАШТЫРЫУ** *к.* **1.** Мотор менән тәьмин итеү.

**2.** Механик транспорт менән тәьмин итеү.

**МОТОРЛЫ** *с.* Мотор ярҙамында эшләгән; мотор ҡуйылған. *Моторлы кәмә.*

**МОТОРО́ЛЛЕР** [*рус.* 〈 *нем.*] *и.* Двигателе артта йәки эйәр аҫтында урынлашҡан бәләкәй тәгәрмәсле мотоцикл төрө. *Мотороллер менән йөрөү.*

**МОТОЦИ́КЛ** [*рус.* 〈 *фр.*] *и.* Эске яғыулыҡлы двигатель ярҙамында хәрәкәт иткән ике йәки өс тәгәрмәсле бәләкәй машина. *Коляскалы мотоцикл. Мотоцикл ярышы. Мотоциклда йөрөү.* ■ *[Хәйруш] .. Мин бит, яҡташ, хәҙер мотоцикл*

*алырға карар иттем. Өс тәгәрмәслеһен. Барыбер машина кеүек ул. Өс кеше ултыра ала. Еңел үҙе, осоп кына тора.* Ғ. Ғүмәр.

**МОТОЦИКЛЕ́Т** [*рус.*] *и. кар.* **мотоцикл.**

**МОТОЦИКЛИ́СТ** [*рус.*] *и.* Мотоцикл менән йөрөгән кеше.

**МОХАҠҠАҠ** [*гәр.*] *с. иҫк. кит.* Ысын, хаҡ, шикһеҙ. *Мохаккак һүҙ. // Бына инде фәкирҙәр синыфына бак: дүҙөх булды был донъялар мохаккак!* М. Ғафури.

**МОХАРӘБӘ** [*гәр.*] *и. иҫк. кит.* Һуғыш.

☐ **Мохарәбә итеү** һуғышыу.

**МОХАСАРА** [*гәр.*] *и. иҫк. кит.* Ҡамалыш, блокада. *Хохлов калган гәскәрҙәре илә башкорттарҙың мохасара рәттәренә һөжүм итте.* М. Һаҙыев.

☐ **Мохасара ҡылыу** ҡамау. *Улар [Алдарҙар] үҙҙәре минең йәйләүҙәрҙе мохасара кылды.* Ғ. Ибраһимов.

**МОХТАЖ** [*гәр.*] *с.* **1.** Нимәгәлер ихтыяж кисергән, ихтыяж булған. *Ярҙамға мохтаж гаилә. Кәңәшкә мохтаж кеше.* ■ *Кеше һәр вакыт яғымлы караш, иркә һүҙгә мохтаж.* Ш. Насыров. *Совхоз эше мохтаж икән етеҙ беләклеләр көсөнә.* Д. Юлтый. *Ата-олатайҙар йәшләгән мохтаж булған байға һатырға.* С. Кулибай.

**2.** *и. мәғ.* Тормош-көнкүрештәге етешһеҙлек; нужа. *Ни теләһәм шуны кейәм, мохтажым юк бер нигә.* Ҡ. Даян. *Карт .. бик байыкты, ти. Бик байығып киткәс бөтә мохтажы бөттө, ти* (Әкиәттән).

♦ **Мохтаж төшөү** ни ҙә булһа кәрәк булып, йомош төшөү.

**МОХТАЖЛЫҠ** *и.* **1.** Тормош-көнкүрештәге етешһеҙлек; нужа, ярлылыҡ. *Мохтажлык күреү. Мохтажлыкта йәшәү. Мохтажлыкка төшөү.* ■ *Аслыкка һәм мохтажлыкка дусар ителгән хеҙмәтсән крәҫтиәндәр .. тағы ла нығырак иҙелеп йәшәргә мәжбүр булған.* Р. Бикбаев.

**2.** Нимәгәлер булған ихтыяж; кәрәклек. *Мохтажлык кисереү.* ■ *[Гөлнур:] Ауылда укытыусылар етешмәй. Совет мәктәбендә белем, тәрбиә алган йәш укытыусыларға мохтажлык ҙур әле.* М. Тажи.

**МОХТАЖҺЫНЫУ** *к.* Нимәгәлер мохтажлыҡ (2 мәғ.) кисереү. *Игтибарға мохтажһыныу.* ■ *Ата иркәләүен мохтажһынып, юкһынғанда кай сак күңелем, йыуандым да, кыуандым да тойоп, илем хәстәрлеген, һөйөүен.* Ғ. Байбурин.

**МОХТАРИӘТ** [*гәр.*] *и. иҫк. кит.* **1.** Ирек, ихтыярлыҡ.

**2.** Идара һәм хөкөм үҙаллығы; бойондороҡһоҙлоҡ. *Мохтариәт алыу. Мохтариәт биреү.* ■ *Большевиктар әйтә: һәр бер илгә камил мохтариәт бирелһен!* Ш. Бабич.

**МОХТАСАР** [*гәр.*] *с. иҫк. кит.* **1.** Ҡыҫҡа, ҡыҫҡартылған.

**2.** *и. мәғ.* Мәҙрәсәлә уҡылған дәреслек исеме. *Вәхит менән Мәхмут шул мәҙрәсәлә әллә нисә йылдар тороп, «Мохтасар» укыу дәрәжәһенә етте.* М. Ғафури.

☐ **Мохтасар ҡылыу** ҡыҫҡартыу. *Яҙаһы һүҙҙәр күп ине, ошоноң менән мохтасар кылдык.* Ж. Кейекбаев.

**МОХӘФФӘР** [*гәр.*] *с. иҫк. кит.* Еңеләйтелгән, ябайлаштырылған, ҡыҫҡартылған. *«Суйтеп» — «шулай итеп» тең мохәффәфелер.* Ғ. Барый.

**МОЧЕВИ́НА** [*рус.*] *и. кар.* **карбамид.**

**МӨБАЛӘҒӘ** [*гәр.*] *и. иҫк. кит.* Ниҙеңдер сиктән тыш арттырып, ҡабартып күрһәтелеүе; гипербола. *Башкортостанды яртылаш һунарсы як тип әйткәндә лә артык мөбаләғә булмаç.* Ғ. Ғисмәти.

**МӨБАРИҘ** [*гәр.*] *и. иҫк. кит.* Бәһлеүән, батыр. *Үлсәне иңен-буйын мөһәндистәр дөрөҫлөгөн хуп күрҙе мөбариҙдар.* Аҡмулла.

**МӨБАССИР** [*гәр.*] *и. иҫк. кит.* **1.** Күҙәтсе.

**2.** Мәҙрәсәлә уҡыусыларҙың эшен, тәртибен күҙәтеү өсөн ҡуйылған кеше. *Коридорҙың бер як башында .. кулдарын артка куйып йөрөгән мөбассир Балтачев был тауышка һиҫкәнеп куйҙы.* С. Агиш.

**МӨБАХ** [*гәр.*] *с. иҫк. кит.* Гонаһҡа һаналмаған, тыйылмаған (эш-ҡылыҡҡа ҡарата). *Китап кына укыған кешеләр әйтә, мәжлестәрҙә йырлау мөбах, ти* (Халыҡ йырынан).

**МӨБТАЛ** [*гәр.*] *с. иҫк. кит.* **1.** Ялғанға сығарылған, кире ҡағылған.

**2.** Юҡҡа сығарылған, бөтөрөлгән. *Мөбтал булыу.*

☐ **Мөбтал итеү** (*йәки* **ҡылыу**) юҡҡа сығарыу, бөтөрөү.

**МӨБТӘЛӘ** [*гәр.*] *с. иҫк.* **1.** *кит.* Нимәгәлер тарыған; дусар. *Ҡайғыға мөбтәлә кеше.*

**2.** *и. мәғ.* Бәхетһеҙлек, ҡайғы, бәлә. *[Абдулла:] Ҡытлык йылдарҙа мөбтәлә күргән йәтим балаларға игәнә йыйҙым.* С. Кулибай. *Ҡандай тел әйтеп бөтөр хак ҫәнаһын, бәндәнең хәлас кылһын мөбтәләһен.* Аҡмулла.

☐ **Мөбтәлә булыу** 1) дусар булыу, тарыу. *Бәхетһеҙ кеше хәйерһеҙ эшкә мөбтәлә булыр.* М. Өмөтбаев; 2) бәйләнешкә инеү, бәйләнеү. *Мәңге бәхетһеҙлек килгәнен көт, [иҫерткес] менән булһаң мөбтәлә.* М. Ғафури. **Мөбтәлә итеү** дусар итеү, тарытыу. *Малды кысыу ауырыуына мөбтәлә итмәç өсөн ябағыһын койған колондарҙы тәрбиә итеү кәрәк.* М. Ғөбәйҙуллин. **Мөбтәләгә төшөү** (*йәки* **ҡалыу**) ауыр хәлгә бәләгә, ҡайғыға ҡалыу. *Бер мөбтәләгә калыр булһаң, һис табылмай икән уңайы* (Халыҡ йырынан).

**МӨБҺӘМ** [*гәр.*] *с. иҫк. кит.* Асыҡ түгел, билдәһеҙ, шикле. *Ер өҫтөндә ни тиклем тор, һаман да максудың мөбһәм!* М. Ғафури. *Сут-сут һайрап теләй аңлатырға алғы көндөң мөбһәм серҙәрен.* Д. Юлтый.

**МӨБҺӘМӘТ** [*гәр.*] *и. иҫк. кит.* Билдәһеҙлек. *Вәсуәсә һәм мөбһәмәт менән тилерҙем алты йыл.* Ш. Бабич.

**МӨБӘЙЙӘН** [*гәр.*] *с. иҫк. кит.* Аңлайышлы, асыҡ. *Мөбәййән һүҙ. // Мөбәййән һөйләү.* ■ *Кем кешеләге серен әйтер мөбәййән, ике нәмә булыр уға мөбәййән: тоткондор кешенең үҙ сере үҙенә, әгәр фаш итһә, булыр тоткон серенә* (Ҡобайырҙан).

**МӨБӘРӘК** [*гәр.*] *с. иҫк. кит.* **1.** Уңышлы, бәхетле, ҡотло. *[Төхфәт:] Рәхимә туташ, һеҙҙең .. мөбәрәк туйығыҙҙа мин үҙемде шат хис кыламын.* Ғ. Хәйри. / Изге, бөйөк. *[Ғәни:] Йә әле,*

*бына ошо мөбәрәк ирендәреңдән бер генә үбәйем.* Х. Ибраһимов.

**2.** (*баш хәреф менән*) Ир-ат исеме.

♦ **Мөбәрәк булһын** уңыш, бәхет теләгәндә әйтелә. *Алтын гына тәңкә, мәрйен яға мөбәрәкәй булһын муйыныңа* (Халыҡ йырынан). **Мөбәрәк урын** юғары вазифалы, дәрәжәле урын.

**МӨГӨҘ** *и.* **1.** Ҡайһы бер хайуандарҙың маңлайындағы һөйәк матдәһенән торған ҡаты үсенде. *Ҡуҫҡар мөгөҙ. Болан мөгөҙө.* ■ *Аҡйелек үгеҙҙе мөгөҙөнән тотоп алған да, маңлайына сирткән* (Әкиәттән).

**2.** Һыйыр малының шул үсендеһенән эсемлек һалып эсеү өсөн яһалған һауыт. *Урал батыр .. мөгөҙҙәге һыуҙы уртланы.* «Урал батыр».

♦ **Мөгөҙ сығарыу** килешмәгән, кәрәкмәгән бер нәмә килтереп сығарыу. *[Шаһнияз:] Бик ирмәк кеше ул беҙҙең Ҡәләмдир. Бер эште лә мөгөҙ сығармай ғына эшләмәҫ.* Ә. Мирзаһитов. **Мөгөҙ сығыу** *ғәҙәттә юкл.* (бер-бер эш-хәлдең әһәмиәтен кире ҡаҡҡанда әйтелә) кешенән артыҡ булыу. *[Ҡарасәс:] Ырыҫ-дәүләт менән мөгөҙ сыҡмай.* Х. Ғәбитов. **Мөгөҙ ултыртыу** ҡан алғанда ҡанды һурҙырыу өсөн мөгөҙ ҡуйыу. **Тәкә мөгөҙө** *этн.* халыҡ сәнғәтендәге биҙәк төрө. **Һыйыр мөгөҙө һындырырлыҡ һыуыҡ** бик ҡаты, үҙәккә үткес һыуыҡ. **Һыйыр мөгөҙөнә элерлек нәмә юҡ** бик фәҡир, һис бер кейем-ҡаралды юҡ, тигән мәғәнәлә әйтелә. *Өйөндә һыйыр мөгөҙөнә элер нәмәһе, йорт малынан бесәйе лә юҡ.* Һ. Дәүләтшина.

● *Тәүҙә үҫкән ҡолаҡты һуңынан үҫкән мөгөҙ үтә.* Әйтем.

**МӨГӨҘЛӨ** *с.* **1.** Мөгөҙө булған. *Мөгөҙлө мал. Мөгөҙлө һарыҡ.*

**2.** *күсм.* Ғәҙәти, тәбиғи булмаған (кешегә ҡарата). *Ниңә, шиғырҙы әллә мөгөҙлө кеше яҙамы?* Н. Мусин.

♦ **Мөгөҙлө түгел** башҡаларҙан артыҡ ере юҡ тигән мәғәнәлә әйтелә.

**МӨГӨҘҺӨҘ** *с.* Мөгөҙө булмаған; тупал. *Мөгөҙһөҙ һыйыр.*

♦ **Мөгөҙһөҙ һыйыр [һымаҡ]** һөмһөҙ, әрһеҙ кешегә ҡарата әйтелә. *Ҡунаҡ бар тип тормай, мөгөҙһөҙ һыйыр һымаҡ, килә лә инә.*

**МӨГӨРЛӘҮ** *к.* Мөгөр-мөгөр һөйләшеү.

**МӨГӨР-МӨГӨР** *окш.* Һөйләшкән кешеләрҙең ситтән тоноҡ булып ишетелгән тауышты белдергән һүҙ. *Мөгөр-мөгөр килеү. Мөгөр-мөгөр итеү.*

**МӨГӘЗӘЙ** [*ғәр.*] *и. тар.* Революцияға тиклемге ауылдарҙа халыҡтан һаҡлыҡҡа иген йыйып һалыу өсөн хеҙмәт иткән ҙур келәт; ил келәте.

**МӨГӘРӘП** [*рус.* погреб] *и.* Төрлө нәмә һаҡлау өсөн ергә ҡаҙып, өҫтөн ябып яһаған махсус соҡор; баҙ. *Дары мөгәрәбе. Картуф мөгәрәбе. Мөгәрәп ҡаҙыу.* ■ *Хөмәйрә өндәшмәй генә аласыҡҡа инде, мөгәрәпкә төштө, бер ҡоштабаҡ һалҡын ҡымыҙ сығарып Өлкәманға һондо.* Ш. Насыров.

**МӨҒАББИР** [*ғәр.*] *и. иҫк. кит.* Төш юраусы. *Дуғар улы Малик бер төш күрҙе, мөғаббирҙин тәъуилене һорар имде.* «Йософ вә Зөләйхә».

**МӨҒЖИЗ** [*ғәр.*] *с. иҫк. кит.* Иҫ китерлек, ғәжәп ҡалырлыҡ; мөғжизәле. *Уйнағас Иблис ҡулында моңло саз, һәр тарафҡа яңырғас мөғжиз ауаз, шул минуттуҡ тынды ҡалды ер-йыһан, шып баҫылды ком-дауыллы ел-буран.* Ш. Бабич.

**МӨҒЖИЗӘ** [*ғәр.*] *и.* Иҫ китерлек, ғәжәп ҡылырлыҡ нәмә йәки хәл-ваҡиға. *Кеше аҡылы әллә ниндәй мөғжизәләр барлыҡҡа килтерә бит.* Д. Юлтый. *Аһ, һинең тауышың, ҡанун — ысын сихырлы мөғжизә.* Ш. Бабич.

**МӨҒЖИЗӘЛЕ** *с.* Иҫ киткес, ғәжәп ҡылырлыҡ. *[Пар машинаһы] ауыл малайҙары өсөн бер мөхжизәле донъя ине.* Р. Низамов.

**МӨҒӨЛӨЙ** *и.* Малайҙарҙың йәйге уйыны (бер оҙон тайаҡ, бер ҡыя башлы бәләкәй тайаҡ алына; уйнаусылар икегә бүленә: бер төркөмө көтә, икенсеһе уйынды алып бара, йәғни таҡтаның осо менән сиртеп, ҡыйыҡбашты һикертә лә һуғып оҙатып ебәрә; көткән кеше уны тоторға, йәки алып, кире ояға ташларға тейеш); шәк. *Мөғөлөй уйнау. Мөғөлөй һуғыу.*

**МӨҒТӘДИЛ** [*ғәр.*] *с. иҫк. кит.* Уртаса. *Төньяҡ — ағаслыҡ, игенселек районы, һауаһы мөғтәдил.* Ғ. Ғисмәти. *Яҙлы-көҙлө сыҡһа ҡояш мөғтәдил булып һаya, күтәрелә ине ерҙән һауаға күм-күк томан.* С. Яҡшығолов.

**МӨҒӘҘҘӘП** [*ғәр.*] *с. иҫк. кит.* Ғазап-михнәт күргән, ыҙа сиккән (кешегә ҡарата). *Улар тел беҙҙәрен сәнсеп, ағыуланды бөтә йәнем, ага йәшем, яна бәғрем, мөғәҙҙәп дәхи выждданым.* Д. Юлтый.

**МӨҒӘЖЖӘЛ** [*ғәр.*] *с. иҫк. кит.* Ашығыс, тиҙ. *Мөғәжжәл эш.* // *Мәһәр башы — баҡырса мең һум, шул мең һум эсенән мөғәжжәл илле һум аҡса.* М. Буранғолов.

**МӨҒӘЙЙӘН** [*ғәр.*] *с. иҫк. кит.* Билдәләнгән, билдәле. *Кем кешегә серен әйтер мөбәййән, ике нәмә булыр уға мөғәййән: тоткондор кешенең үҙ сере үҙенә, әгәр фаш итһә, булыр тоткон серенә* (Бәйеттән).

**МӨҒӘЛЛИМ** [*ғәр.*] *и. иҫк.* **1.** Дәрес биреүсе, уҡытыусы. *Ауыл мөғәллиме. Мөғәллим булыу.*

**2.** (*баш хәреф менән*) Ир-ат исеме.

**МӨҒӘЛЛИМЛЕК** *и. иҫк.* Мөғәллим вазифаһы, мөғәллим хеҙмәте. *Мөғәллим хеҙмәте. Мөғәллимлек итеү. Мөғәллимлеккә уҡыу.* ■ *Ике йыл ғүмерем мөғәллимлек менән бик күңелле уҙып китте.* М. Ғафури.

**МӨҒӘЛЛИМӘ** [*ғәр.*] *и. иҫк.* **1.** Уҡытыусы ҡатын-ҡыҙ. *Мөғәллимә шундай уҡымышлы башы менән ауыл килене булып тормаҫ инде.* М. Тажи.

**2.** (*баш хәреф менән*) Ҡатын-ҡыҙ исеме.

**МӨҒӘМӘЛӘ** [*ғәр.*] *и.* Кемгә йәки нимәгәләр ҡарата эске талаптан сығып күрһәтелгән ҡылыҡ; мөнәсәбәт. *Йомшаҡ мөғәмәлә. Ябай мөғәмәлә. Яҡшы мөғәмәләлә булыу.* ■ *Ҡыҙға ... рәхмәт әйтә алманым, сөнки ул төҫлө мөғәмәләнең рәтен белмәй инем.* С. Агиш.

□ **Мөғәмәлә итеү** кемгә йәки нимәгәләр ҡарата бер төрлө ҡылыҡ мөнәсәбәт күрһәтеү.

**МӨҒӘҺӘДӘ** [*ғәр.*] *и. иҫк. кит.* Ике арала төҙөлгән килешеү; вәғәҙә, договор. *Вәхәнәй бабай ҙа баярға ҡунаҡсыллыҡ күрһәтте. Пашковка Оло Әрмет йылғаһында һалабаш быуаһы төҙөргә рөхсәт итте. Улар ошо турала мөғәһәдә яҙыштылар.* И. Ғиззәтуллин.

**МӨДДӘҒИ** [*ғәр.*] *и. иҫк. кит.* Дәғүә итеүсе. *Сеү, казый быларҙың белде эшене, бойорҙо мөдҗәги булмыш кешене.* Һ. Сәлихов.

**МӨДДӘҒӘ** [*ғәр.*] *и. иҫк. кит.* Дәғүә ителгән нәмә. *Һәр бер тараф мөддәғәһен кылыр иҫбат.* М. Ғафури.

**МӨДИР** [*ғәр.*] *и.* Ниндәй ҙә булһа, эш, ойошма, идара етәксеһе; башлыҡ, етәксе. *Уҡыу-уҡытыу эштәре мөдире. Ферма мөдире. Клуб мөдире.*

**МӨДИРИӘТ** [*ғәр.*] *и. иҫк. кит.* Ниндәй ҙә булһа эш йәки ойошма башындағы етәкселәр төркөмө; етәкселек. *[Мазлумов:] Мәҙрәсәнең мөдириәте .. уҡыу-уҡытыу программаларын яҡшыртыу юлында зәррә ҡәҙәре лә эшләмәгән.* Ғ. Ғүмәр.

**МӨДИРЛЕК** *и.* Мөдир вазифаһы, мөдир хеҙмәте. *Мөдирлеккә үрләтелеү.*

□ **Мөдирлек итеү** мөдир булып эшләү, мөдир вазифаһын үтәү.

**МӨДҺИШ** [*ғәр.*] *с. иҫк. кит.* Ҡот осҡос, ҡурҡыныс. *Мөдһиш үлем.* ■ *Төштө тәхеттәр емерелеп, батшалар, таждар, быгауҙар. Яҡтылыҡты ҡаплаған мөдһиш, ҡараңғы пәрҙәләр юҡҡа сыҡтылар бөтөнләй.* Ш. Фидаи.

**МӨДӘЛЛӘ** [*ғәр.*] *с. иҫк. кит.* Дәлилләнгән, иҫбат ителгән. *Мөдәллә нәмә. // [Туҡай:] ..Беҙ йәштәребеҙҙе Бохараға ебәрһәк — ишәк, Истамбулға ебәрһәк — полицейский вә шпион булып ҡайтасаҡтары быгаса ҡайтҡандары илә сабит вә мөдәлләдер.* Ғ. Хөсәйенов.

**МӨДӘРРИС** [*ғәр.*] *и. иҫк.* **1.** Мәҙрәсәлә дәрес биреүсе, өлкән уҡытыусы. *Россияла ислам диненә бер ҙә хөрәфәт ҡатыштырмай ғына уҡыта, белем бирә торған бер мөдәррис һәм бер мәҙрәсә табыуҙан өмөтөмдө өҙҙөм.* М. Ғафури.

**2.** (*баш хәреф менән*) Ир-ат исеме.

**МӨДӘРРИСЛЕК** *и. иҫк.* Мөдәррис вазифаһы, мөдәррис хеҙмәте.

□ **Мөдәррислек ҡылыу** мөдәррис булып эшләү, мөдәррис вазифаһын үтәү.

**МӨДӘФӘҒӘ** [*ғәр.*] *и. иҫк. кит.* Һаҡланыу маҡсатында күрһәтелгән ҡаршылыҡ. *Бүре килә, үгеҙ ҡыла мөдәфәғә, Бүрене һөҙә, һаман ситкә ҡаға.* М. Ғафури.

**МӨҘ:** **мөҙ булыу** *диал.* һемәйеү, нимәнәндер мәхрүм булыу. *Мөҙ булып ҡылыу.* **Мөҙ итеү** *диал.* һемәйтеү, мәхрүм итеү.

**МӨҘҘӘТ** [*ғәр.*] *и. иҫк. кит.* **1.** Нимәгәлер билдәләнгән ваҡыт араһы. *Мөҙҙәте тулды. Өс йыл мөҙҙәт менән бирҙе.* ■ *Хәҙер армияла хеҙмәт итеү мөҙҙәте ике йылға ҡалдырылды.* «Ағиҙел», 1968 № 2.

**2.** Ниҙелер башҡарыу өсөн билдәләнгән ваҡыт сиге. *Мөҙҙәте етте.* ■ *Әйтелгән мөҙҙәткә күпер әҙер булды.* З. Биишева.

**3.** Ниҙеңдер һуңыраҡҡа күсерелгән ваҡыты. *Мөҙҙәт алыу. Мөҙҙәт биреү.*

**МӨҘҘӘТЛЕ** *с. иҫк. кит.* Ваҡыты сикле, ваҡытлы. *Мөҙҙәтле эш. Мөҙҙәтле булыу. Мөҙҙәтле итеү.*

**МӨҘҘӘТҺЕҘ** *с. иҫк. кит.* Ваҡыты сикһеҙ. *Мөҙҙәтһеҙ паспорт. Мөҙҙәтһеҙ булыу. Мөҙҙәтһеҙ итеү.* ■ *Урмандар крәҫтиәндәр ғаиләһенә мөҙҙәтһеҙ файҙаланырға бирелде.* Р. Алушев.

**МӨҘРӨНКӨ** *с. диал. ҡар.* **йонсоу**[2] 1. *Ошо арала бик мөҙрөнкө булды. Һарынаға ла йөрөп ҡараныҡ, унһыһы ла табылманы.* Ә. Әлибаев.

**МӨҘРӘТЕҮ** *ҡ.* Ныҡ йонсотоп хәлһеҙләндереү. *Мал-тыуарҙы мөҙрәтмәй сығарыу.*

**МӨҘРӘҮ** *ҡ. диал.* **1.** Киңгәү. *Ауырыуҙан мөҙрәү.*

**2.** Һүлпәнләнеү. *Ҡаушап мөҙрәү.*

**МӨҘӘККӘР** [*ғәр.*] *с. иҫк. кит.* Ир енесенә мөнәсәбәтле. *Исемем мөҙәккәр тип маҡтанмаһын ҡояшка хурлыҡ бирмәҫ тәьниҫ замир.* Аҡмулла.

**МӨҘӘКӘРӘ** [*ғәр.*] *и. иҫк. кит.* Кәңәшмә. *Телдә бер ҡалыпҡа һалыу юлында төрлө мөҙәкәрә булды.* Т. Йәнәби.

□ **Мөҙәкәрә итеү** (*йәки* **ҡылыу**) 1) һөйләшеп, фекер алышыу; кәңәшләшеү. *Үҙҙәренең ниндәй ҡәбиләгә мәнсүб икәнен белеү, шул турала мөҙәкәрә ҡылыу буйынса ҡаҙаҡ халҡы беренсе милләттер.* М. Ғафури; 2) ниҙеңдер хаҡында фекер әйтеш мөнәсәбәтен белдереү. *Был конституцияның проектын беҙҙең илдең алтмышлаған милләт һәм халыҡтары үҙ телендә уҡып, мөҙәкәрә итте.* Һ. Дәүләтшина.

**МӨҘӘРИС** *и.* **1.** *ҡар.* **мөдәррис.**

**2.** (*баш хәреф менән*) Ир-ат исеме.

**МӨЖАБ** [*ғәр.*] *с. иҫк. кит.* Һорауы, үтенесе ҡабул ителгән. *Дине, ҡануны мөжабынса ғибәҙәттә булыр.* С. Яҡшығолов.

**МӨЖКӘЛӘК** *с. диал.* Мыжыҡ. *Мөжкәләк кеше.*

**МӨЖКӘЛӘҮ** *ҡ. диал.* Мыжыу. *Мөжкәләп йөрөү.*

**МӨЖӨЛДӘҮ** *ҡ. диал.* Һуҡранып һөйләнеү.

**МӨЖӨҮ** *ҡ. диал.* **1.** *ҡар.* **мөнйөү** 1. *Һөйәк мөжөү.*

**2.** *кусм.* Ирекһеҙләп алыу; талау; йолҡкослау (аҡсаға ҡарата). *Уның да ике балаһы ике яҡтан аҡсаһын мөжөй.*

**МӨЖӨҺӨР** *и. диал* Мөншөгөр. *Мөжөһөр ояһы.*

**МӨЖТӘҺИД** [*ғәр.*] *с. иҫк. кит.* **1.** Тырыш. *Мөжтәһид кеше.*

**2.** Дин-шәриғәт өлкәһендә ҙур белемле. *Ул [Бохара] — кәҙими замандарҙан бире ғалимдар, мөжтәһидтәр донъяһы.* Ғ. Ибраһимов.

**МӨЖӘДДИД** [*ғәр.*] *и. иҫк. кит.* Ниндәйҙер яңылыҡ индергән кеше. *Инсаниәт тормошонда ниндәй хәлдәр булмаған, ниндәй фәйләсуф, мөжәддидтәр уларға килмәгән.* Х. Ғәбитов.

**МӨЖӘССӘМ** [*ғәр.*] *с. иҫк. кит.* **1.** Нимәнеңдер һыны, нимәгәлер хас сифат, күренеш сағылған. *Уның биттәрендәге тәрән эҙҙәр — үткән ғүмерендәге ауыр көндәрҙең мөжәссәм шаһиты.* Б. Мирзанов. // *Әйе һиңә бөтә матурлыҡтың һәйкәл мөжәссәме бирелгән* Д. Юлтый.

**2.** Ҙур, мөһабәт. *Шул мөжәссәм йәнле йәмдәрҙе кешеләр «ҡыҙ» тиҙәр.* Ш. Бабич.

**3.** *и. мәт.* Геометрик есем.

**МӨЖӘССӘМӘ** [*ғәр.*] *и. иҫк. кит.* Нимәнеңдер һыны, сифаты сағылған нәмә. *Тәҙрә төбөндә торған көррәи арз шикелле көррәи мөжәссәмәне күреп, хәҙрәтебеҙ: «Был нимә һуң?..» — тине.* М. Ғафури.

**МӨЖӘҺИД** [*гәр.*] *и. иҫк. кит.* Дин юлындағы көрәшсе. *Ислам мөжәһидтәре.*

**МӨЗ: мөз булыу** *шул уҡ* **мөздәм булыу** (*ҡар.* **мөздәм**).

**МӨЗДӘМ: мөздәм булыу** кеше араһында хур булыу, әҙәм көлкөһөнә ҡалыу. *[Ныязгол:] Ошо юлы минән еңелеп ҡайтһа, бөтә ауылға хәбәр таралыр, көлөрҙәр ине. Шуның бер мөздәм булып ҡайтҡаны кәрәк ине.* Һ. Дәүләтшина. **Мөздәм итеү** кеше араһында хурлыҡҡа ҡалдырыу, әҙәм көлкөһөнә ҡалдырыу.

**МӨЗҺИР** [*гәр.*] *с. иҫк. кит.* Сәскәле, балҡышлы. *Һаҙиҙар исеменә мөзһир булыр зиһенлелек, һәләтлелек — шарты ғади.* Аҡмулла.

**МӨЗӘЙЙӘН** [*гәр.*] *с. иҫк. кит.* Биҙәлгән, биҙәкле. *Мөзәййән йорт.* ■ *Һис тә уфтанма, күңелһеҙ булды, тип, гүмәрем башы, алда гүмереңдең мөзәййән аллы-гөллө ахыры бар.* Ш. Бабич.

**МӨЗӘККӘР** [*гәр.*] *и. иҫк. кит.* Ир енесенә мөнәсәбәтле грамматик категория.

**МӨЙКӨЛДӘҮ** *к.* Һуҡраныҡ һөйләнеү; мыжыу. *[Хәсәндең юлдаштарының береһе:] — Юҡҡа бынан киттек. Ат моңмо ни беҙгә, тип мөйкөлдәп тә ала.* Ә. Вахитов.

**МӨЙМӨЛДӘТЕҮ** *к.* Ослайтып ҡыбырлатыу (ауыҙҙы).

**МӨЙМӨЛДӘҮ** *к.* Ослайып, ҡыбыр-ҡыбыр итеү (ауыҙға ҡарата). *Ауыҙы мөймөлдәп тора.*

**МӨЙӨҘ** *и. диал.* Мөгөҙ.

**МӨЙӨШ** *и.* **1.** Берәй нәмәнең яҡ-яғы, сит-сите ҡушылған ерҙәге ҡыры йәки осо. *Келәт мөйөшө. Китап мөйөшө. Өҫтәл мөйөшө. Һандыҡ мөйөшө.* ■ *Айбулат ситәндең нығытылмай ҡалған мөйөштәрен йәш тал менән ҡыҫып бәйләй ине.* Һ. Дәүләтшина. *Сәгиҙә бер йорттоң мөйөшөнән боролғанда аяғы тайып китте.* М. Тажи.

**2.** Арҡыры ятҡан ике урам рәтенең ҡушылған ере. *Урам мөйөшө.* ■ *Маклирҙар баҙар мөйөшөндә беҙгә ҡаршы осраны!* Д. Юлтый.

**3.** Берәй нәмәнең яҡтары ҡушылған эске өлөшө. *Бүлмәнең мөйөшө. Мөйөштәге һандыҡ.* ■ *Бесәй мөйөштә бер сысҡан йөрөгәнен һиҙеп ҡалған* (Әкиәттән). *Алап мөйөшөндә бер устай ғына бойҙай ҡалған.* / Йорт-ҡура эсенең бер сите, төпкөлөрәк урыны. *Аулаҡ мөйөш.* ■ *Аҡназарҙың балалары .. бер мөйөшкә барып өйөлөп кенә ятҡан.* Ғ. Дәүләтшин. / Яҫы нәмәнең ике яғы киҫешкән урыны, осо, өҫтәге мөйөшө *Шәл мөйөшө. Газета мөйөшө.* / *күсм.* Күңел тыныслығын билдәләгән бер бөтөнлөк, теүәллек. *Тормоштоң бер мөйөшө емерелгән, .. яҡынлыҡ та йылылыҡ та юҡ тыуған өйҙә.* Б. Бикбай.

**4.** *күсм.* Күңелдәге, йөрәк түрендәге сихри урын. *Кеше күңеленең мең мөйөшө булған кеүек, ҡурайҙың да мең яғы бар. Ул шаян да, бойоҡ та, дәртле лә, нәфрәтле лә була ала.* «Совет Башҡортостаны», 1971, 16 март.

**5.** Ваҡытлыса йәшәп тороу өсөн бирелгән урын. *[Хәйҙәр:] Искәндәр ағай, мин күсенәм. Торлаҡта бер мөйөш бирәләр, ҡунаҡ итеп тотҡан өсөн үҙегеҙгә бик ҙур рәхмәт.* Ә. Бикчәнтәев.

**6.** *мат.* Бер үк нөктәнән сыҡҡан ике тура һыҙыҡ араһындағы яҫылыҡ өлөшө. *Тура мөйөш. Ҡыҫыҡ мөйөш. Йәйенке мөйөш. Мөйөш осо. Мөйөш яҡтары.*

**7.** *күсм.* Алыҫ ятҡан урын; төпкөл. *Беҙ Башҡортостандың төрлө ҡараңғы мөйөшөнән яҡтылыҡ нурына һыуһап килдек.* С. Агиш. / Киң бер ерҙең айырым урыны. *Тәбиғәттең гүзәл мөйөшө. Якутияның көньяҡ-көнбайыш мөйөшө шул алмаслы район булып сыҡты.* М. Хисмәтов.

**8.** Халыҡҡа белем, тәрбиә, ял биреү урыны итеп эшләнгән махсус бүлмә. *Хәрби мөйөш. Тарих мөйөшө.*

**9.** (*йәки* **дүрт мөйөш**) Балалар уйыны (буш бура эсендә дүрт мөйөшкә дүрт кеше тора, уртала берәү ҡала; мөйөштәгеләр урын алмашҡанда, урталағы кеше береһенең мөйөшөн алырға тырыша).

♦ **Ҡыҙыл мөйөш** учреждениела, ятаҡта һ. б. урында культура-ағартыу эше өсөн бүленгән бүлмә. **Мөйөшкә баҫтырыу** тәртип боҙғаны өсөн балаға бирелгән яза төрө.

**МӨЙӨШЛӨ** *с.* Күпмелер мөйөшө булған, күпмелер мөйөштән торған. *Алты мөйөшлө өй.* ■ *Гербтың өҫкө өлөшөндә биш мөйөшлө йондоҙ.* Башҡорт АССР-ының Конституцияһы, 1984.

**МӨЙӨШЛӨК** *и.* **1.** Мөйөш һыҙыу, перпендикуляр үткәреү һ. б. өсөн өсмөйөш формаһындағы һыҙыу инструменты.

**2.** Машина деталдәрендә, ҡырҡыу һәм үлсәү инструменттарында һ. б. ике яҫылыҡ араһындағы мөйөштәрҙе үлсәй торған прибор.

**3.** Йәшник, сумаҙан, рам кеүек нәмәләрҙең мөйөштәрен биҙәү йәки нығытыу өсөн ҡуйыла торған тимер. *Йәшниккә мөйөшлөк ҡағыу.*

**МӨЙӨШЛӘНЕҮ** *к.* **1.** *төш. ҡар.* **мөйөшләү**. *Мөйөшләнгән хат.*

**2.** Мөйөш рәүешенә килеү. *Өс мөйөшләнеү.* ■ *Уның ҡалын ирендәре .. мөйөшләнеп китте.* Ә. Чаныш.

**3.** *күсм.* Өйлө, торор урынлы булыу. *Мөйөшләнер саҡ. Мөйөшләнеп алыу.*

**4.** *күсм. һөйл.* Ғәмәлгә ашыу, теүәлләнеү. *Теләгем мөйөшләнде.* ■ *Әйҙә, мин әйтәм, дәртең мөйөшләнһен, .. уҡы.* С. Агиш. **Дүрт мөйөшләнеү** камил хәлгә килеү, теүәлләнеү. *[Фатима:] Гөлдәр килгәс, өйөм дүрт мөйөшләнеп киткәндәй булды.* Б. Бикбай.

**МӨЙӨШЛӘҮ** *к.* Мөйөш рәүешенә килтереү, мөйөшлө итеү. *Мөйөшләп бөкләү.* ■ *[Полковник] батальонды дүрт мөйөшләп теҙҙерҙе.* Д. Юлтый.

**МӨЙӨШ-ҺӘЙЕШ** *и. йыйн.* Берәй нәмәнең мөйөштәре. *Инде йорттоң ҡыйығы ла яныр бөттө, мөйөш-һәйештәре ҡыйшая башланы.* З. Биишева.

**МӨЙТ-МӨЙТ** *окш.* Ҡыбыр-ҡыбыр иткән хәрәкәтте белдергән һүҙ. *Мөйт-мөйт итеү. Мөйт-мөйт килеү.*

**МӨЙТӨЛДӘТЕҮ** *к.* Мөйт-мөйт иттереү (иренде). *Ауыҙҙы мөйтөлдәтеү.*

**МӨЙТӨЛДӘҮ** *к.* Мөйт-мөйт итеп ҡыбырлау (иренгә ҡарата). *Йәмилдең ирене мөйтөлдәп ҡуя, керпектәре дерт-дерт итә.* Ш. Янбаев.

**МӨЙТӘНЛӘҮ** *к. ҡар.* **мөйтөлдәү**.

**МӨЙШӘНЛӘҮ** *к. ҡар.* **мөйтөлдәү**.

**МӨЙӘТ** *и.* Ҡамыт ағасының эске яғына ура-

тып ҡуйған йомро йомшаҡ нәмә (эсенә һалам ҡуйып, тышын йүкәнән үрәләр йәки күн менән көпләйҙәр). *Ҡамыт мөйәте. Мөйәт үреү.* ■ *Ҡамыттарҙың мөйәте эшлектән сыҡҡан. Иҫкеһен ташлап, оҙон күрән бесәнде шәлкем йүкә менән сырмаклап, мөйәт ишараты яһайбыҙ.* Й. Солтанов.

**МӨЙӘТЛӘҮ** *ҡ.* **1.** Ҡамытҡа мөйәт (1 мәғ.) ҡуйыу. *Ҡамытты мөйәтләү.*

**2.** Нимәнелер мөйәт (1 мәғ.) рәүешенә килтереп төрөү. *Уның [ҡыҙылармеецтың] күкрәгендә автомат, муйынында мөйәтләп төрөлгән шинель ине.* И. Абдуллин.

**3.** *күсм.* Буйһонорға мәжбүр итеү, буйһондороу. *Боронғолар: йөҙ ҡурҡаҡҡа ҡарағанда, бер батыр артығыраҡ тигәндәр,— тине. Малик Атаханов,— ә беҙ алтау ... тимәк алты йөҙ мөртәтте мөйәтләй алабыҙ.* Ә. Ихсан.

**МӨЙӘШӘ** *и. ҡар.* **мөшкә** 1.

**МӨКАБӘРӘ** [*ғәр.*] *и. иҫк. кит.* Эрелек; мин-миналек. *Мораттары мөкабәрә булғандан һуң көнсөләр күҙ һалмайҙар аръяғына.* Аҡмулла.

**МӨКАФӘТ** [*ғәр.*] *и. иҫк. кит.* **1.** Бүләк. *Мөкафәт алыу. Мөкафәт биреү.* ■ *Күп тархандар ҡорос батшаға ҡиммәтле мөкафәттәр ебәрә башлаған* (Хикәйәттән).

**2.** Ниҙеңдер бәрәбәренә бирелгән нәмә.

□ **Мөкафәт ҡылыу** бүләк итеү.

**МӨКИББӘН** [*ғәр.*] 1. *с.* Бөтә күңеле, йәне-тәне менән бирелгән. *Мөкиббән кеше.* ■ *[Һауынсы:] Эй, һылыуҡайым, бигерәк һин эшкә мөкиббән.* Ш. Насыров.

**2.** *р.* Йән-тән менән; ихлас. *Мөкиббән ғашиҡ булыу.* ■ *Рәис, шәп кешеләй булып, мөкиббән тыңлап ултырған була бит әле.* Н. Мусин.

♦ **Мөкиббән китеү** бер нәмәгә бик ныҡ бирелеү; бик ныҡ мауығыу. *[Ғәззә] бер генә эште лә ярты-йорто эшләмәй, бер нәмәгә тотонһа, мөкиббән китә.* Ф. Иҫәнғолов.— *Түрә тинеләрме — мөкиббән китәбеҙ ҙә ҡуябыҙ. Һый-хөрмәт итәбеҙ.* И. Насыри.

**МӨКИРЛӘНЕҮ** [*ғәр.*] *ҡ.* Икеләтә артыҡ көс, тырышлыҡ һалыу. *[Муллағәли] көндөҙөн эре-торо эше менән була, ә кисен мөкирләнеп шкафына тотона.* Р. Солтангәрәев.

**МӨКӨ** *и.* Ҡул тирмәненең он ҡойола торған тишеге. *Мөкөнән ҡойолған ярма.*

**МӨКӨС** *с. диал.* Үтә ярлы, фәҡир.

**МӨКӨ-ТАҠЫ** *р. диал.* Таҡы-тоҡо. *Аҙыҡ мөкө-таҡы ғына ҡалды.*

**МӨКШӘ** *и. диал. ҡар.* **морондоҡ** [2].

**МӨКӘММӘЛ** [*ғәр.*] *с. иҫк. кит.* Тамамланған, тулы, камил.

□ **Мөкәммәл итеү** тамамлау.

**МӨКӘММӘЛЛӘШТЕРЕЛЕҮ** *ҡ. иҫк. төш. ҡар.* **мөкәммәлләштереү**. *Һуғыш техникаһы үткән ике һуғыш тәжрибәһе нигеҙендә мөкәммәлләштерелә.* «Совет Башҡортостанының ун йылы», 1929.

**МӨКӘММӘЛЛӘШТЕРЕҮ** *ҡ. иҫк.* Камиллаштырыу. *Техниканы мөкәммәлләштереү.*

**МӨКӘММӘЛСӘ** *р. иҫк.* Тулыһынса. *Инсаниәт шәжәрәһенән йыйып әҫәр, милләткә мөкәммәлсә күрһәт хеҙмәт.* С. Яҡшығолов.

**МӨКӘРЛИК** *и. диал.* Бормаса ҡабырсаҡлы шыуышып йөрөй торған йәнлек; ҡусҡар.

**МӨКӘРӘМ** [*ғәр.*] *с. иҫк. кит.* **1.** Хөрмәтле, ҡәҙерле.

**2.** Кешенән тарыҡмай торған; кешелекле.

**3.** (*баш хәреф менән*) Ир-ат исеме.

**МӨКӘТӘ: мөкәтә ян** *иҫк.* һыртына бүре тарамышы тартып эшләнгән ян.

**МӨКАЙӘСӘ** [*ғәр.*]: **мөкайәсә итеү** *иск. кит.* сағыштырыу. *Беҙҙең хаятыбыҙ газета вә матбуғат илә мөкайәсә ителер.* М. Ғафури.

**МӨҠИӘТ** [*ғәр.*] *с. диал.* Дәртле, тәүәккәл. *Мөҡиәт кеше.*

**МӨҠӘДДӘМ** [*ғәр.*] *иҫк. кит.* Бынан элек, борон. *Ун йыл мөҡәддәм ҡараңғы төндә нурһыҙ йондоҙҙар күрҙе хаҡ нурҙы.* И. Насыри. / Элек, алда. *Хәҙрәттәрҙән мөҡәддәм химәйәтле байҙар шәкерттәрҙең хаҡлы икәнен белеп, ҡыҙғана башланы.* М. Ғафури.

**МӨҠӘДДӘМӘ** [*ғәр.*] *и. иҫк. кит.* Эштең, һүҙҙең өлөшө; баш һүҙ, инеш. *Оратор .. һүҙенә мөҡәддәмә яһаны.* Д. Юлтый.

**МӨҠӘДДӘР** [*ғәр.*] *и. иҫк. кит.* Яҙмыш, тәҡдир. *Ят ҡулдарына ҡалыуым мөҡәддәрҙә яҙылған* (Халыҡ йырынан).

**МӨҠӘДДӘС** [*ғәр.*] *с.* Изге, бөйөк, хөрмәтле. *Мөҡәддәс ант. Мөҡәддәс бурыс. Мөҡәддәс эш.* ■ *Һәр бер халыҡ үҙенең йырын .. йөрәгенең иң мөҡәддәс хазинаһы итеп һаҡлай.* З. Биишева. *Тыныслыҡты һаҡлап алып ҡалыу һәм нығытыу бурысы бығаса бер ҡасанда булмағанса мөҡәддәс.* «Совет Башҡортостаны», 1986, 19 апрель.

**МӨҠӘДДӘСЛЕК** *и. кит.* Изгелек, бөйөклөк. *[Шағир] һәр кем өсөн донъяла иң ҡәҙерле әсә телен йөрәк ялҡынын һалып данлай, уның бөйөклөгөн, мөҡәддәслеген йырлай.* Ғ. Хөсәйенов.

**МӨЛ** [*рус.* моль] *и.* Һалға бәйләмәй, тарау көйө ағыҙған ағас; ҡыуғын.

**МӨЛАХАЗА** [*ғәр.*] *и. иҫк. кит.* Ҡарау, тикшереү һөҙөмтәһендә килгән фекер.

**МӨЛДӨ** *и. диал.* Селбәрә.

**МӨЛДӨРЛӘТЕҮ** *ҡ. диал.* Мөлдөрәтеү.

**МӨЛДӨР-МӨЛДӨР** *оҡш.* Ташыр сиккә етеп тулышҡан шыйыҡлыҡҡа ҡарата әйтелгән һүҙ. *Әнисәнең күҙҙәре шарҙай була, мөлдөр-мөлдөр йәштәре килеп тула.* К. Кинйәбулатова.

**МӨЛДӨРӘМӘ** *р.* Ситенән артыла яҙғанса, түгелеп китерҙәй; күҙенән. *Мөлдөрәмә булыу. Мөлдөрәмә ҡойоу. Мөлдөрәмә тулы.* ■ *Ошо һуҡмаҡ буйлап апай-еңгәйҙәр күнәктәрен мөлдөрәмә тултырып әле лә һыу ташыйҙар.* М. Дилмөхәмәтов. *Табаҡ менән мөлдөрәмә итеп һурпа килтерелде.* Ғ. Дәүләтшин.

**МӨЛДӨРӘТЕҮ** *ҡ.* Нимәнелер күҙенән, түгелә яҙғанса тултырыу (шыйыҡлыҡты). *Һыуҙы мөлдөрәтә ҡойоу.* / Тымырҙай, түгелерҙәй итеп тулыштырыу. *Күҙ йәшен мөлдөрәтеү.*

♦ **Күҙҙе мөлдөрәтеү** 1) нимәгәләр өмөт итеп, тилмереп ҡарау. *Төлкө, ҡорт сағыуҙан ҡурҡып, үлән араһына кергән дә, күҙен мөлдөрәтеп, боҫоп тик ята.* Ж. Кейекбаев; 2) йәш аралаш ҡарау.

**МӨЛДӨРӘҮ** *ҡ.* **1.** Артыла, түгелә яҙғанса тулыу (шыйыҡлыҡҡа ҡарата). *Мөлдөрәп торған ҡырлы стакандар тағы өҫтәлгә килеп ултырҙы.* Ә. Вәли. / Түгелерҙәй, ағып китерҙәй булып тулышыу (күҙ йәшенә ҡарата). *Мөлдөрәп тамыу.*

■ *Ҡайғыға аралашып ҡайнар йәшем мөлдөрәп ике күҙҙән ағыр ине.* Ш. Бабич.

**2.** *күсм.* Ниндәйҙер хис, тойғо менән тулыу (күҙгә ҡарата). *Оҙон керпектәре араһынан оялсан ғына ҡараған күҙҙәре мөлдөрәп тора.* Т. Килмөхәмәтов. / Күҙ ҡарашына зар, үтенес сығарыу; тилмереү. *Нишләһен, бала бит ул — йөрәк ҡаны. Бәҙиғолдоң .. мөлдөрәп кенә, әллә ниҙәр өмөт итеп ҡарауына Айытбикә еңгә лә сыҙап тора алманы.* Т. Хәйбуллин.

**МӨЛДӨРӘШЕҮ** *к. урт. ҡар.* **мөлдөрәү** 2. *Урам уртаһына теҙелешеп ылауҙар туҡтаған. Төргәктәр өҫтөндә, мөлдөрәшеп ҡарап, ябыҡ ят кешеләр ултыра.* Р. Низамов.

**МӨЛЗӘМ** [*ғәр.*] *с. иҫк. кит.* Бәхәстә еңелеп, туҡтарға мәжбүр булған (кешегә ҡарата).

□ **Мөлзәм булыу** бәхәстә еңелеү. **Мөлзәм итеү** бәхәсләшеп еңеү.

**МӨЛК-МӨЛК** *окш.* Тулышып, йомшаҡ ҡына булып, ҡуҙғатҡанда тертелдәп торған нәмәнең хәрәкәтен белдергән һүҙ. *Мөлк-мөлк итеү.*

**МӨЛКӨЛДӘК** *с.* Мөлк-мөлк итеп һелкенеп торған. *Мөлкөлдәк тәнле.* ■ *Аждаһа ла, юха ла һаҙлыҡта, мөлкөлдәк урындарҙа, йылға баштарында оялап йәшәй* (Әкиәттән).

**МӨЛКӨЛДӘТЕҮ** *к.* Мөлк-мөлк иттереү. *Ете һөлөк мөлкөлдәтеп ҡан һура* (Әкиәттән).

**МӨЛКӨЛДӘҮ** *к.* Мөлк-мөлк итеп һелкенеү. *Ауыр кәүҙәле Аллаяр .. мөлкөлдәп тыпырлап алды.* Ф. Иҫәнғолов.

**МӨЛКӨЛДӘШЕҮ** *к. урт. ҡар.* **мөлкөлдәү.**

**МӨЛКӘНЕҮ** *к. диал.* Мөлкөлдәү.

**МӨЛКӘТ** [*ғәр.*] *и.* Кемдең йәки нимәнеңдер ҡарамағында булған бөтә нәмә; милек, байлыҡ. *Халыҡ мөлкәте. Мөлкәт бүлешеү.* ■ *Был немецтар башҡорт ярлыһының ҡулы менән байлыҡ йыйғандар, уларҙың әсе тирҙәре, ҡандары арҡаһында мөлкәт туплағандар ҙа, хәҙер капиталист булырға уйлап яталар.* Ғ. Дәүләтшин. *Минең бөтә мөлкәтем — бер һандыҡ та бер мендәр, күтәрәм дә китәм.* Ғ. Ғүмәр.

**МӨЛКӘТЛЕ** *с.* Мөлкәте күп; бай. *Мөлкәтле кеше. Мөлкәтле булыу. Мөлкәтле итеү.*

**МӨЛКӘТҺЕҘ** *с.* Мөлкәте аҙ; ярлы. *Мөлкәтһеҙ кеше. Мөлкәтһеҙ булыу.*

**МӨЛЛӘТ** [*ғәр.*] *и.* **1.** *ҡар.* **мөҙҙәт.**

**2.** *күсм.* Өҫтәге бурыс. *Мөлләт ауыр, мөлләт күп эш һорай, энергия шунда төбәлгән.* Д. Юлтый.

**МӨЛЛӘҮ** *к.* Ҡыуғынлау. *Һанһыҙ күп бүрәнәләрҙе юғарыла, Иҙелдең бейек тау араларынан сылтырап аҡҡан ерҙәрендә мөлләп ағыҙалар.* А. Таһиров.

**МӨЛӨМ** [*рус.* молем] *р.* Ҡыуғынлап. *Мөлөм ағыҙыу.*

**МӨЛӨМСӨ** *и. диал. ҡар.* **ҡыуғынсы** ².

**МӨЛӨТ** *и.* Бер башҡорт ырыуының исеме.

**МӨЛТ-МӨЛТ** *окш.* Ниҙеңдер ҡапыл-ҡапыл күренеп юғалғанын йәки асылып йомолғанын белдергән һүҙ. *Мөлт-мөлт итеү. Мөлт-мөлт килеү.* ■ *Бабай .. күҙҙәрен мөлт-мөлт йомғолап ирендәрен ҡыбырлаттып алды.* Р. Солтангәрәев.

**МӨЛТӨЛДӘТЕҮ** *к.* Мөлт-мөлт иттереү. *Күҙҙе мөлтөлдәтеү.*

**МӨЛТӨЛДӘҮ** *к.* Мөлт-мөлт итеү. *Һуҡыр шәм мөлтөлдәп торҙо ла һүнде.*

**МӨЛХӘТҺЕНЕҮ** *к. ҡар.* **мөрхәтһенеү.**

**МӨЛӘЙЕМ** [*ғәр.*] *с.* **1.** Йылмайып торған асыҡ йөҙлө; йылы, йомшаҡ мөғәмәләле; ағымлы. *Мөләйем йөҙлө. Мөләйем ҡараш. Мөләйем ҡыҙ. Мөләйем булыу.* // *Мөләйем һөйләшеү.* ■ *Ирйегет үтә һөйкөмлө, мөләйем кеше ине бит.* З. Биишева. *Маһи апай мөләйем генә итеп ҡыҙына ҡарап, йылмайып ҡуйҙы.* К. Мәргән.

**2.** Теләккә ярашлы, күңелгә ятыш. // *Таң атҡан. Күскенсе башҡорттарға был урын, Таналыҡ буйы, мөләйем күренгән.* Ҡ. Аралбаев.

**МӨЛӘЙЕМЛЕК** *и.* Мөләйем булыу сифаты. *[Р. Туйсина:] Фәйзи Ғәскәров башҡорт бейеүенең нескәлектәрен, серҙәрен аңлатты, башҡорт ҡыҙҙарының мөләйемлеген, тыйнаҡлығын бейеүҙә күрһәтергә өйрәтте.* «Совет Башҡортостаны», 1975, 28 август.

**МӨЛӘЙЕМЛӘНДЕРЕҮ** *к.* Мөләйемгә әйләндереү, мөләйем итеү. *[Мирғасим — ҡыҙҙар хаҡында:] Ҡайныһы күҙен мөләйемләндереп ҡарап йылмая ла һинең йөрәгеңде ярһыта.* А. Таһиров.

**МӨЛӘЙЕМЛӘНЕҮ** *к.* Мөләйемгә әйләнеү, мөләйем булыу. (күҙгә, йөҙгә ҡарата).

**МӨЛӘҠАТ** [*ғәр.*] *и. иҫк. кит.* Кеше менән кешенең осрашыуы.

□ **Мөләҡат итеү** осрашыу.

◆ **Әлхаты нисфөл мөләҡат** хат ярты осрашыу (элек хатты ошо һүҙҙәр менән башлар булғандар).

**МӨЛӘҠҠАБ** [*ғәр.*] *с. иҫк. кит.* Ҡушаматлы. *Иншад итеүсе мөләҡҡаб дәрмәнд Аҡмуллағыз донъяла хур булһа булһын, мәржәғы нар булмаһын.* Аҡмулла.

**МӨМКИН** [*ғәр.*] *мөн.* **1.** Билдәле шарттар булғанда эш-хәлдең үтәлеү ихтималлығын белдерә. *Был восстаниеға фронт буйындағы бөтә крәҫтиәндәр ҡушыласаҡтар. Ул хәрәкәттең киҙәйеп китеүе бик мөмкин.* Д. Юлтый. *Батшалыҡты ҡолатмай тороп, беҙгә тулы ирекҡә ирешеү мөмкин түгел.* Һ. Дәүләтшина. / Эйәлек формаһындағы исем ҡылым менән берәй эш-хәлдең булыуы хаҡында фараз белдергәндә әйтелә. *Әхмәтйәнов йәш булһа ла ҡарт сырайлы күренә. Уның бисәле булыуы бик мөмкин.* Д. Юлтый. / Эйәлек формаһындағы исем ҡылым йәки юҡлыҡ формаһындағы *-а/-ә* хәл ҡылымы менән килеп, юҡлыҡта торһа, эш-хәлдең булыу-булмауын ҡәтғи рәүештә инҡар иткәнде белдерә. *Мин уйлайым, беҙҙә теләһәң дә мөмкин түгел етем булырға.* Ғ. Сәләм. *Йәш бала өсөн әсә һөтөнән дә яҡшы аҙыҡтың булыуы мөмкин түгел.* «Башҡортостан ҡыҙы», 1968, № 9. *Мин уға һиҙҙермәй генә ҡарайым, сөнки уға ҡарамай мөмкин түгел.* Ғ. Хәйри.

**2.** Берәй эшкә рөхсәт биргәндә, рөхсәт һорағанда әйтелә. *Һинә ҡайтып китергә мөмкин.* ■ *«Мөмкинме?» — тип колхоз идараһына бер кеше килеп инде.* М. Тажи. / **Булыу** ҡылымы менән эш-хәл өсөн шарт булыу-булмауын белдергән ҡушма ҡылым яһай. *Телефон сыбыҡтары өҙөлгән, штабтар менән хәбәр алышыу мөмкин булмаған.* Д. Юлтый.

**3.** Шарт эйәрсән һөйләмдә килеп шарт мәғәнә-

һен көсәйтә. *Мөмкин булһа көнсөллөк менән үҫеп, күптән дөйә булыр ине бик күп көсөк.* С. Ҡудаш.

**4.** *с. мәг.* Булырҙай, булыуы ихтимал. *Мөмкин хәл.*

♦ **Мөмкин булһа** үтенес, теләк менән мөрәжәғәт иткәндә әйтелә. *Әгәр мөмкин булһа, осор ине йөрәк талпынып.* Х. Ҡунаҡбай. *[Егет — батшаға:] Мөмкин булһа, азатлыҡ бир* (Әкиәттән). **Мөмкин булған тиклем** эш, хәл йәки ниндәйҙер сифаттың юғары кимәлен, дәрәжәһен белдергәндә әйтелә. **Мөмкин хәтлем [ҡәҙәр]** булдыра алғанса, хәлдән килгәнсә. *Көҙ көнө йыйылышта халыҡҡа фронт хәлдәрен һөйләп, һәр кем мөмкин тиклем ярҙам итһен тигәс, ике йөктән артыҡ шөкәрә киптерҙеләр.* Һ. Дәүләтшина.

**МӨМКИНЛЕК** *и.* **1.** Ниндәйҙер эш-хәл өсөн уңай шарт. *Мөмкинлек булыу. Мөмкинлек асылыу. Мөмкинлек табыу. Мөмкинлекте файҙаланыу.* ■ *Арлы-бирле төшкән снарядтар, һауала ярылған шрапнелдәр асыҡ һауала йәшеренергә мөмкинлек бирмәйҙәр.* Д. Юлтый.

**2.** Берәй эште башҡарыуға булған һәләтлек. *Мөмкинлеге бар.*

**МӨМКИНЛӘШЕҮ** *к.* Мөмкинлек асылыу. *Хәҙер ер йөҙөнөң иң ҡараңғы, иң алыҫ мөйөштәренә үтеп, мәҙәни хужалыҡ короу мөмкинләште.* Ғ. Ғисмәти.

**МӨМКИНСЕЛЕК** *и. ҡар.* **мөмкинлек.** *Мөмкинселектән файҙаланыу.* ■ *Хеҙмәтеңдә һөйөү — үҙеңдә булған мөмкинселекте, талапты үҫтереү икән ул.* Ә. Зәйнуллин.

**МӨМТАЗ** [*ғәр.*] *с. иҫк. кит.* Нимәһе менәндер айырылып торған, өҫтөн. *Һуғышҡа оҫталығы һәм батырлығы менән мөмтаз булып танылған башҡорт халҡы дошмандарына ҡаршы тора ала ине.* Ғ. Ғисмәти.

**МӨНАЗАҒА** [*ғәр.*] *и. иҫк. кит.* Бәхәс, ыҙғыш. *Мөназаға ҡуптарыу.*

**МӨНАЗИҒ** [*ғәр.*] *и. иҫк. кит.* Бәхәсләшеүсе. *Ул [Мәржәни] ине ҡояш бәҙигтан, .. ғали, шанлы мөназигтан, жөда булдыҡ, дәриға аһ!* Аҡмулла.

**МӨНАСИБ** [*ғәр.*] *с. иҫк. кит.* **1.** Яраҡлы, ярашлы. *Аҡмулла мөфти хәҙрәткә хитап итеп шиғыр һөйләне, һүҙҙәрен вә әслүбен мөнасиб килтерҙе.* Р. Фәхретдинов. *[Башҡорттар] иҫке тормоштарын, кантон замандарын һөйләп, шуға мөнасиб йырҙарын йырлап ебәрәләр.* М. Ғафури.

**2.** Әҙәпле. *Мөнасиб кеше. Мөнасиб булыу.*

**3.** (*баш хәреф менән*) Ир-ат исеме.

**МӨНАФИҠ** [*ғәр.*] *с. иҫк. кит.* Эскерле, ике йөҙлө. *Мөнафиҡ кеше. Мөнафиҡ булыу.* ■ *Яҡтылыҡтан, яҡты нурҙан ул мөнафиҡ ни ҡасса? Сөнки мөнафиҡтың бөтә ғәйебен аса.* М. Ғафури.

**МӨНБИТ** [*ғәр.*] *с. иҫк. кит.* Ҙур уңыш биргән, уңдырышлы. *Күп иланым, йәштәрем мөнбит урынға төшмәне.* М. Ғафури.

**МӨНБӘР** [*ғәр.*] *и.* **1.** Мәсеттә мулла менеп вәғәз һөйләй торған урын [михраб эсенә ҡалҡыу итеп яһалған була]. *Илай-илай ҡарғай хәҙрәт меҫкен мөнбәрҙә.* Б. Ишемғол.

**2.** *иҫк.* Трибуна. *Төлкө мөнбәргә сығып, баш эйеп, йыйылған халыҡты сәләмләгәндән һуң һүҙ башланы.* М. Ғафури.

**3.** *иҫк. күсм.* Тәхет. *Ҡоллоҡ мөнбәрен ҡолатыу.* / Хөрмәтле урын, түр. *Яңы тормоштағы яңы моңдар күңелем мөнбәренә ҡуйылһын.* Х. Ғәбитов.

**4.** *иҫк. күсм.* Берәй хәл-ваҡиғаның иң көслө, күренекле урыны, үҙәге. *Кескәй Башҡортостан һуғыш хәрәкәтенең мөнбәре булып ҡалған.* «Совет Башҡортостанының ун йылы», 1929.

**МӨНДӘРИЖӘ** [*ғәр.*] *и. иҫк. кит.* Эстәлек, йөкмәтке. *Китаптың мөндәрижәһе.* ■ *Бәғзе берәүҙәр уның [Ш. Бабичтың] ныҡлы бер ҡалыпҡа һалына, тотороноко юлға — мөндәрижәгә төшә алмауын уның тәбиғәтенән, хосусиәтенән күрәләр.* И. Насыри.

**МӨНЙӨЛӨҮ** *к. төш. ҡар.* **мөнйөү** 1. *Мөнйөлгән һөйәк.*

**МӨНЙӨМӘ** *с.* Юҡ-барҙан ғәйеп табып, өҙлөкһөҙ һөйләнеп, әрләп йөрөүсән. *Мөнйөмә кеше. Мөнйөмә булыу.*

**МӨНЙӨҮ** *к.* **1.** Һөйәктәге итте теш менән кимереп ашау. *Һөйәк мөнйөү.*

**2.** *күсм.* Кемдеңдер аҡсаһын, мөлкәтен өҙгөсләү. *Муса Шәйхетдин карттың саҙаҡаһынан килгән төшөмөн бер аҙ мөнйөмәксе булды.* Ш. Насыров.

**МӨНКИР** [*ғәр.*] *и.* **1.** *иҫк. кит.* Бер нәмәгә лә ышанмай, гел кире ҡағып тороусан кеше. *Һүҙең үтмәҫ мәғариф мөнкиренә, ҡолаҡ һалмаҫ улар меңдең беренә.* М. Ғафури.

**2.** (*баш хәреф менән*) Ислам диненсә, үлгәс, теге донъяла һорау ала торған ике фәрештәнең береһе (икенсеһе **Нәнкир**). *Ғазраил алыр минең йәнемде, кемдәр йыуыр минең тәнемде. Мөнкир вә Нәнкир килгән саҡта кемдәр белер минең хәлемде* (Бәйеттән).

**МӨНКӘР** [*ғәр.*] *с. иҫк. кит.* Ғәйепле, гөнаһлы. *Мөнкәр эш.*

□ **Мөнкәр итеү** ғәйепле итеү, ғәйепле һанау.

**МӨНҠАЛИБ** [*ғәр.*] *с. иҫк. кит.* Алмашынған, үҙгәргән.

□ **Мөнҡалиб булыу** үҙгәреү. *Инҡилапта мөнҡалиб булған, күсенгән, ти, Ғүмәр.* Ш. Бабич.

**МӨНҠАРИЗ** [*ғәр.*] *с. иҫк. кит.* Юҡҡа сыҡҡан, бөткән.

□ **Мөнҡариз булыу** юҡҡа сығыу, бөтөү. *Эске идаралары [башҡорттоң] үҙ ҡулдарында булһа ла, Алтын Урҙа хөкүмәте бар ваҡытта Алтын Урҙа хөкүмәтенә, ул мөнҡариз булып, Ҡазан дәүләте майҙанға килгәс, Ҡазан дәүләтенә табиғ булмыштыр.* М. Һаҙыев. **Мөнҡариз итеү** юҡҡа сығарыу, бөтөрөү.

**МӨНТӨК** *и. һөйл.* Ғәйеп итер урын; етешһеҙлек, кәмселек. *Мөнтөк табыу. Мөнтөк эҙләү.* ■ *Бында барыбыҙҙы ла һөйләп тораһы юҡ. Бындай мөнтөктәрҙән берегеҙ ҙә буш түгелһегеҙ. Килдебайҙың да беҙҙең менән ҡойроғо туңған.* Ғ. Дәүләтшин.

**МӨНТӘБИҠ** [*ғәр.*] *с. иҫк. кит.* Тап килгән, тиң. *Фәхриҙең фәхре түгел яҙмышы менән мөнтәбиҡ, хәлфә булған, сөнки меҫкен ғәйре рәсми бер табиб.* Ш. Бабич.

**МӨНТӘЛЕҮ** *к. төш. ҡар.* **мөнтәү** 1. *Мөнтәлгән сәс.*

**МӨНТӘМИН** [*ғәр.*] *с.* Кемгә йәки нимәгәлер мөнәсәбәтле, бәйләнешле. *Мин был урында*

*шул мең һаҙаклы Урҙас бейгә мөнтәмин булған балаларыбыҙ шәжәрәһен күсерәмен.* «Башҡорт шәжәрәләре», 1960.

**МӨНТӘНЛӘҮ** *к. кар.* **мөйтөлдәү.** *Мөнтәнләп ашау.*

**МӨНТӘҪЛӘҮ** *к.* Унан-бынан өҙөп-йолҡоп мөнтәү.

**МӨНТӘТЕҮ** *к. йөкм. кар.* **мөнтәү.** *Сәсте мөнтәтеү.*

**МӨНТӘҮ** *к.* **1.** Ниҙеңдер остарын ҡыҫҡа, тигеҙһеҙ итеп ҡырҡҡылау. *Ағас башын мөнтәү. Сәсте мөнтәү.*

**2.** *диал.* Мөнйөү. *Һөйәкте мөнтәү.*

**МӨНТӘШИР** [*ғәр.*] *с. иҫк. кит.* Таралған, йәйелгән.

□ **Мөнтәшир булыу** таралыу, йәйелеү.

**МӨНХӘСИФ** [*ғәр.*] *с. иҫк. кит.* Солғаулы, ҡамаулы, сикле. *Уйлаһам мин ҡара бәхетем, мөнхәсиф йондоҙҙарым, йәш түгел ҡандар ағыҙмаҡ әҙ буласаҡтыр һиңә.* Я. Юмаев.

**МӨНШӨҒӨР** *и.* Селәндәр ғаиләһенә ҡараған төнгө һаҙ ҡошо; күл буғаһы. *Мөншөғөрө ултыра мөңкөлдәп, торнаһы оса торҡолдап.* Ғ. Дәүләтшин.

**МӨНӘЖЖИМ** [*ғәр.*] *и. иҫк. кит.* **1.** Йондоҙҙарҙы, йыһанды өйрәнеүсе; астроном.

**2.** Йондоҙҙарға ҡарап күрәҙәлек итеүсе; йондоҙ һанаусы. *Ап-аҡ һаҡаллы ҡарт мөнәжим шаһ ҡаршыһына килеп сәждә ҡылды.* Б. Ишемғол.

**МӨНӘЖӘТ** [*ғәр.*] *и.* **1.** Аллаға мөрәжәғәт ителгән һүҙ.

**2.** Көйләп уҡыла торған дини шиғыр. *Мөнәжәт әйтеү.*

**3.** Көйләп уҡыла торған халыҡ шиғыры. *Мөнәжәт сығарыу.* ■ *Яман ғына тауҙы бик йәлләйем, мөнәжәт кенә сығарып яҙайым* (Халыҡ йырынан).

**МӨНӘСӘБӘТ** [*ғәр.*] *и.* **1.** Кемгә йәки нимәгәлер ҡарата эске талаптан, аң-тойғонан сығып күрһәтелгән ҡылыҡ; мөғәмәлә. *Насар мөнәсәбәт. Яҡшы мөнәсәбәт.* ■ *Йылҡыларҙың хәле күҙгә күренеп арыулана башланы. Дөрөҫ, был уларҙың [ат ҡараусыларҙың] .. аңлы мөнәсәбәттән түгел ине әле.* Б. Бикбай. / Нимәнелер аңлауҙан, төшөнөүҙән килгән ҡараш. *Тормошка булған мөнәсәбәт.*

**2.** Эш, тормош, ижтимағи хеҙмәт нигеҙендә барлыҡҡа килгән бәйләнеш. *Дипломатик мөнәсәбәт. Ижтимағи мөнәсәбәт. Капиталистик мөнәсәбәт. Ғаилә мөнәсәбәте. Сауҙа мөнәсәбәте. Хеҙмәт мөнәсәбәте.* ■ *Зөләйха менән ике араларғы мөнәсәбәт ҡоро һөйләшеүҙән генә ғибәрәт.* Т. Йәнәби.

**3.** Төрлө нәмә һәм күренештәрҙең билдәле шарттар нигеҙендәге үҙ-ара бәйләнеше. *Фекер менән донъя араһындағы мөнәсәбәт. Тереклек донъяһының эске мөнәсәбәте.*

**4.** Ниндәйҙер эш-хәлгә булған ҡатнашлыҡ; ҡағылыш. *Уларҙың талашына мөнәсәбәтем юҡ.*

**5.** Ниндәйҙер эшкә сәбәп булған бәйләнеш. *[Суяшев:] Эйе, Октябрь байрамы мөнәсәбәте менән бында ҡаты боролош яһарға кәрәк.* Д. Юлтый.

♦ **Мөнәсәбәт һүҙ** *кар.* **һүҙ.**

**МӨНӘСӘБӘТЛЕ** *с.* Ниндәйҙер мөнәсәбәт менән бәйле. *Башҡорт тарихына мөнәсәбәтле ҡомартҡылар.*

**МӨНӘСӘБӘТЛЕК** *и. лингв. кар.* **модаллек.** *Мөнәсәбәтлек категорияһы.*

**МӨНӘСӘБӘТТӘШ** *с.* Үҙ-ара мөнәсәбәтле, мөнәсәбәт менән бәйле. *Мөнәсәбәтле заман формалары .. билдәле бер ваҡыт менән мөнәсәбәттәш була.* Ж. Кейекбаев.

**МӨНӘҮҮӘР** [*ғәр.*] *с. иҫк. кит.* **1.** Нурлы, яҡты. *Шәһадәт нуры илә мөнәүүәр улған ғазиҙар ..* М. Өмөтбаев.

**2.** (*баш хәреф менән*) Ир-ат исеме.

**МӨҢГӨРЛӘҮ** *к.* Мөңгөр-мөңгөр итеү, мөңгөр-мөңгөр килеү. *Ул [Әпхалиҡ] хатты асып, мөңгөрләп уҡыны ла, .. бик ҡәнәғәт ҡалды.* Ж. Кейекбаев.

**МӨҢГӨРЛӘШЕҮ** *к. урт. кар.* **мөңгөрләү.** *Мөңгөрләшеп ултырыу. Мөңгөрләшеп һөйләшеү.*

**МӨҢГӨР-МӨҢГӨР** *окш.* Әкрен генә һөйләгән кешенең тоноҡ булып ситтән ишетелгән тауышын белдергән һүҙ. *Мөңгөр-мөңгөр итеү. Мөңгөр-мөңгөр килеү. Мөңгөр-мөңгөр һөйләшеү.* ■ *Шәмси күтәрмәнән төшөп, мөңгөр-мөңгөр килгән халыҡҡа табан боролдо.* Ғ. Хәйри.

**МӨҢҒӨРӘҮ** *к. диал.* Мөңрәү.

**МӨҢКӨЛДӘҮ** *к.* Асыуланып, һуҡранып һөйләнеү; мөжөлдәү. *Юлдыбай өндәшмәй ятып ҡараны ла, Рәйсә һаман мөңкөлдәгәс: «Йә, ят инде, һөйләнеп торма!» — тине.* Һ. Дәүләтшина.

**МӨҢКӘНЛӘҮ** *к. диал.* Бөкрәнләү. *Мөңкәнләп эшләү.*

**МӨҢӨЛӨҮ** *к.* Ауыр уй-хистәрҙән баҫылып, онотолоу. *Шул уйҙар эсендә ул мөңөлөп ултыра.* Б. Хәсән.

**МӨҢӨРЛӘҮ** *к. диал.* Мөңрәү.

**МӨҢӨР-МӨҢӨР** *окш.* **1.** Һыйыр малының тауышын белдергән һүҙ. *Сыңғыр-сыңғыр сыңраған йылҡыһы күп Урал тау, мөңөр-мөңөр мөңрәгән һыйыры күп Урал тау* (Ҡобайырҙан).

**2.** *күсм.* Әкрен генә көйләгәндә сыҡҡан тауышты белдергән һүҙ. *Мөңгөр-мөңгөр итеп көйләү.*

**3.** *кар.* **мөңгөр-мөңгөр.**

**МӨҢРӘҮ** *к.* **1.** Бик үк ныҡ ҡысҡырмай баҡырыу (һыйыр малына ҡарата). *Быҫҡаҡлап яуған яуында кәртәләге һыйырҙарҙың бөршәйеп, мөңрәп тороуҙары һылыуҙың йөрәгенә боҙло һыу һипкән һымаҡ булды.* Т. Йәнәби. *Саң борҡотоп, мөңрәй-мөңрәй көтөү ҡайтты ауылға.* А. Игебаев.

**2.** *күсм.* Әкрен генә көйләү. *Гитараға ҡушылып мөңрәгән ирҙәр тауышы ишетелде.* С. Агиш.

**3.** *кар.* **мөңгөрләү.**

**МӨҢРӘШЕҮ** *к. урт. кар.* **мөңрәү.** *Һыйырҙар мөңрәшәләр, бәрәстәрен юғалтып, һарыҡтар баҡырышалар ҙа, табып алғас, еҫкәп, мыҡырҙайҙар.* Һ. Дәүләтшина.

**МӨРАББАҒ** [*ғәр.*] *и. иҫк. кит.* Тәүге өс юлы рифмалашҡан дүрт юллыҡ шиғыр.

**МӨРИТ** [*ғәр.*] *и. иҫк.* **1.** Берәй дин әһеленә

өйрәнсек, эйәрсән булған кеше; шәкерт. *Ишанга мөрит булырга килгән суфыйҙар һәм тагы әллә кемдәр өйлә намаҙына агыла башланы.* М. Ғафури.

2. (*баш хәреф менән*) Ир-ат исеме.

**МӨРИТСЕЛЕК** *и. иҫк.* Кафырҙарға ҡаршы һуғышыу маҡсатын алға ҡуйған дини хәрәкәт.

**МӨРЙӘ** *и.* Төтөн сығарыу йәки һауа йөрөһөн өсөн хеҙмәт иткән торба; **төтөн юлы.** *Завод мөрйәһе. Сыуал мөрйәһе. Мөрйә төбө. Мөрйәне томалау.* ■ *Һәр өй һайын усаҡ мөрйәләре ҡуйы төтөн бөркә һауаға.* Ғ. Амантай. *Ул [Салиха] самауырына ҡуҙ һалып мөрйә ҡуйҙы ла, сыгып китте.* Ж. Кейекбаев.

♦ **Ике донъя — бер мөрйә** *кар.* **донъя.** *Рахмайга ни, ике донъя — бер мөрйә, Рахмай шулай гәмһеҙ генә көн итә.* К. Кинйәбулатова. **Мөрйәһе ҡыйыш** ҡапыл үпкәләп барған кешегә ҡарата әйтелә; үпкәсел. **Мөрйәһе ҡыйыш булһа ла, төтөнө тура сыға** тыштан килешһеҙ, асылы дөрөҫ булған саҡта әйтелә. *Мөрйәһе ҡыйыш булһа ла, төтөнө тура сыга, тигән һүҙ бар. Үҙем шулай гына булһам да законды ашатлап киткәнем юҡ әле, кәрәк ерендә тейешлеһен әйтәм дә бирәм.* М. Тажи.

**МӨРЙӘСЕ** *и.* Мөрйә таҙартыусы. *Мөрйәсе бул балам, кешеләрҙең өйҙәрендә уттар һүнмәһен.* Ғ. Әмири.

**МӨРСӘЛИН** [*гәр.*] *и. иҫк. кит.* **1.** Эш-вазифа менән сит илгә ебәрелгән кеше; илсе.

2. Пәйғәмбәр.

**МӨРТӨЙ** *и. диал.* Мурҙай.

**МӨРТӘТ** [*гәр.*] *и.* **1.** Диндән яҙған, динен ташлаған кеше. *Ауыл ҡарттары, уның иманы ҡаскан, шайтан ҡотҡоһона эйәргән ул, тип [Хафизга] «Мөртәт» тигән ҡушамат таҡтылар.* В. Исхаков.

2. Үҙенекеләргә хыянат итеп, дошман яғына күскән кеше; хыянатсы. *[Арыҫлан — Ғәлигә:] Минең мөртәт булгым килмәй. Баш осома балта күтәрелһә лә, мин үҙем һайлап алган көрәш юлынан сигенмәм.* И. Ғиззәтуллин.— *Һин, мөртәт, ауыҙыңа һалганды ла йота белмәҫһең әле.., атайың мәрхүм кеүек.* Р. Ғабдрахманов.

**МӨРТӘТЛЕК** *и.* Мөртәткә (1 мәғ.) хас сифат. *Мөртәтлек күрһәтеү.*

**МӨРТӘТЛӘНЕҮ** *ҡ.* Мөртәтлек күрһәтеү. *[Реакция заманында] күп кеше батшанан мәрхәмәтлек көтөп, мөртәтләнеп, уга маҡтау һүҙе яҙыра башлаган.* Ғ. Хөсәйенов.

**МӨРУР** [*гәр.*] *и. иҫк. кит.* Дауам, ағым, ваҡыт араһы. *Мин, фәкир Тажетдин, атам Ялсыголдо ун дүрт йыл көттөм. Ун дүрт йыл мөрурында ҡайтып килде.* «Башҡорт шәжәрәләре», 1960.

**МӨРХИМ** [*гәр.*] *с. иҫк. кит.* Рәхимле, шәфҡәтле. *Мин дә һине хөрмәт итәм, мәрхәмәт ит. Һинән һорай мәжрүх йөрәк, мөрхим туташ.* Ш. Бабич.

**МӨРХӘТ** [*гәр.*] *и. кит.* Ҡәнәғәтлек, рәхәтлек. *Мөрхәт табыу. Мөрхәт биреү.*

**МӨРХӘТЛӘНЕҮ** *ҡ.* Ҡәнәғәтлек, рәхәтлек кисереү. *Мөрхәтләнеп йәшәү.*

**МӨРХӘТҺЕНДЕРЕҮ** *ҡ. төҙәттә юкл.* Риза итеү, ҡәнәғәтләндереү. *Старшина үҙе белгәнсә, фараз иткәнсә яуап бирергә тырышты. Ләкин улар күбеһен әллә ни мөрхәтһендермәне.* Ғ. Хөсәйенов. *Был һүҙҙәр атайымды мөрхәтһендермәне.* «Алдар менән Зөһрә».

**МӨРХӘТҺЕНЕҮ** *ҡ. төҙәттә юкл.* Риза булыу, ҡәнәғәтләнеү; хушһыныу. *Рәнйемәсе, әсә, танһыҡ ашты мөрхәтһенмәй ситкә эткәнгә, һеҙ, кисергән ауыр йылдар өсөн тарихымда урын бөткәнгә.* Р. Аҙнағолов. / Һанға алыу, тиң күреү. *Ҡатынды мөрхәтһенмәү. Иптәште мөрхәтһенмәү.*

**МӨРШИД** [*гәр.*] *и. иҫк. кит.* **1.** Юл күрһәтеүсе, етәксе. *Был баҫҡыста тәрикәттә суфый ишандар араһынан үҙенә мөршид табып, уга мөрит була, уның ҡушҡанын гына ҡылып йөрөгән алла бәндәһенә әйләнә.* Ә. Харисов.

2. (*баш хәреф менән*) Ир-ат исеме.

**МӨРӘББИ** [*гәр.*] *и. иҫк. кит.* Тәрбиәсе. *Мөрәбби булыу.*

**МӨРӘҘ** *и. диал.* Ҡырмыҫҡа майы. *Тәнде мөрәҙ менән ыуыу.*

**МӨРӘЖЖӘХ** [*гәр.*] *с. иҫк. кит.* Башҡаларҙан артыҡ күрелгән, артыҡ һаналған, өҫтөн. *Мөрәжжәх булыу.*

**МӨРӘЖӘҒӘТ** [*гәр.*] *и.* **1.** Берәй кешегә йүнәлтелгән һүҙ. *Юлияның мөрәжәгәте бер ниндәй ҙә һөҙөмтә бирмәне.* Һ. Дәүләтшина.

2. Халыҡҡа бағышланған һүҙ; өндәмә. *Мөрәжәгәт иглан итеү.* ■ *1919 йылда Башкортостан улдары, В. И. Лениндың мөрәжәгәтенә яуап итеп, тиҙ ваҡыт эсендә Петроградҡа барып, башҡаланы Юденич бандаларынан ҡотҡарыуҙа киткес батырлыҡтар күрһәттеләр.* Р. Шәкүров.

□ **Мөрәжәғәт итеү** 1) төбәп һүҙ ҡушыу, өндәшеү. *Иптәш, юлдаш тип мөрәжәгәт итеүҙәренә Сәгиҙә бер аҙ уңайһыҙланды.* М. Тажи; 2) эш, үтенес менән өндәшеү.

**МӨРӘЖӘҒӘТНАМӘ** [*гәр. + фарс.*] *и. иҫк.* Яҙма мөрәжәғәт.

**МӨРӘККӘБ** [*гәр.*] *с. иҫк. кит.* **1.** Бер нисә нәмәнән ойошҡан; бер нисә өлөштән торған; йыйылма, ҡушма.

2. Яҙа торған ҡара.

□ **Мөрәккәб булыу** ниҙәндер тороу, ниҙәлер үҙ эсенә алыу; ғибәрәт булыу. *Беренсе йыйылыш ошбу ... уставҡа ҡул ҡуйган учредителдәрҙән мөрәккәб буласаҡ.* Ғ. Ғисмәти.

**МӨРӘТТӘБ** [*гәр.*] *с. иҫк. кит.* Тәртипкә килтерелгән, рәткә һалынған; тәртипле. *Мөрәттәб хужалыҡ. Мөрәттәб булыу.* ■ *Ни кәҙәр гүзәл мәктәп, .. һәр бер эше мөрәттәб.* М. Ғафури.

**МӨРӘҮӘТ** [*гәр.*] *и. кит.* **1.** Ирлек, егетлек. *[Ғилемдар:] Хәләл бисәңдең дәрте шашыу бер иргә лә мөрәүәт түгелдер ул.* Д. Исламов. *Ун ике йәшкә киткән егеткә санала юрган ябынып ултырыу мөрәүәтме ни ул.* Й. Солтанов.

2. Йомарт күңеллек, кешелеклек. *[Сәгиҙә:] Әллә бөтөнләй алмашынып бара инде был әбей: күҙҙәрендә мөрәүәт ҡалмаган.* Ә. Атнабаев.

♦ **Мөрәүәт китәреү** намыҫһыҙланыу, әрһеҙләнеү.

**МӨРӘҮӘТЛЕ** *с.* Яҡшылыҡ эшләй торған; кешелекле. *Мөрәүәтле кеше.* / Күңелгә яҡын булған; ғәзиз, изге. *Мөрәүәтле тыуган яҡ. Мөрәүәтле булыу.* ■ *Йәбештең дә [Даһи] теш-тырнагың менән мөрәүәтле ата йортона.. типһәң*

*тимер өҙөр мәлгә етеп, әйләндең һин тиреҫ ҡортона!* Ш. Бикҡол.

**МӨРӘҮӘТЛЕЛЕК** *и.* Мөрәүәтле булыу сифаты. *Ә бына инде уның [Эльвираның] аҡыллы күҙҙәренә ҡараһаң, унда ни тиклем мөрәүәтлелек, ни тиклем ихтыяр һәм дәрт барлығын күрәһең.* Ҡ. Ибәтуллин.

**МӨРӘҮӘТҺЕҘ** *с.* Выжданын юғалтҡан; оятһыҙ. *Шул саҡ һалдаттың күҙ алдына гүр әйәһе — мөрәүәтһеҙ һәм шөкәтһеҙ үлем образы килеп баҫа.* Ғ. Хөсәйенов. *[Исхаҡ Ғиндулла хаҡында:] Күҙҙәрен дә йоммай мөрәүәтһеҙ, ҡара уны, нисек яҡлаша!* С. Ҡудаш.

**МӨРӘҮӘТҺЕҘЛЕК** *и.* Мөрәүәтһеҙ булыу сифаты. *Юлдан арып килгән ҡунаҡҡа ҡыҫҡа саҡлы бер сынаяҡ сәй ҙә эсермәү, һый-хөрмәт күрһәтмәү ҙур мөрәүәтһеҙлек булыр бит әле, тип борсолдо Гөлйәүһәр әбей.* Х. Кәрим.

**МӨС** *и. иҫк.* Физик хәлдән килгән мөмкинлек; көс.— *Дейеүҙең мөсө ҡойроғонда. Һин иң элек уның ҡойроғон өҙ* (Әкиәттән).

**МӨСАБӘҠӘТ** [*ғәр.*] *иҫк. кит.* Ярыш, алыш.

□ **Мөсабәҡәт ҡылыу** ярышыу, алышыу; һүҙ көрәштереү. *Мөхәммәтсәлим әфәнде, үҙ сәнгәтендәге бер кеше берлә осрашыуы сәбәпле булһа кәрәк, күңеле асылып мөсабәҡәт ҡылырға кереште.* Р. Фәхретдинов.

**МӨСАҒӘДӘ** [*ғәр.*] *и. иҫк. кит.* Булдырылған мөмкинлек, ярҙам.

□ **Мөсағәдә ҡылыу** нимәләр эшләргә мөмкинлек биреү. *Ауылға китергә тормош мөсағәдә ҡылмай торҙо.* М. Ғафури. *Хәҙерге әхүәл мөсағәдә ҡылмағанлыҡтан, газетабыҙ был көндән иғтибаран, мөүәҡҡәт туҡталып торасаҡ.* Т. Йәнәби.

**МӨСАМӘРӘ** [*ғәр.*] *и. иҫк. кит.* Күңелле һөйләшеүҙәр, әңгәмә. *Сәй мәжлесе тамам булыу берлә мосахәбәт бүлмәһенә сыҡтыҡ, бында оҙон мөҙәттәр мөсамәрә булды.* Р. Фәхретдинов.

□ **Мөсамәрә ҡылыу** күңелле итеп һөйләшеп ултырыу; әңгәмәләшеү.

**МӨСАУИ** [*ғәр.*] *иҫк. кит.* Тигеҙ, бәрәбәр. *Был ерҙә беҙ барыбыҙ ҙа мөсауи.* С. Яҡшығолов.

**МӨСБИТ** [*ғәр.*] *и. иҫк. кит.* Иҫбат итеүсе.

**МӨСКИР** [*ғәр.*] *и. иҫк. кит.* Иҫерткес эсемлек. *Көнө-төнө һаман мөскир эсерҙәр* (Бәйеттән).

**МӨСКӨЛДӘҮ** *ҡ.* **1.** Ләүк-ләүк өрөү, ләңкелдәү (сәүек эткә ҡарата). *Тәүҙә мөскөлдәп бер көсөк йүгереп сыҡты.* К. Мәргән.

**2.** *күсм.* Ризаһыҙлыҡ белдереп һөйләнеү; сәйнәнеү. *Хәйбулла ағайҙың урам буйында мөскөлдәп йөрөүенә асыуы ҡабара башлаған Күсәрбай уны туҡтатып: «Сәйнәнәһеңме, Хәйбулла ағай?» — тине.* К. Мәргән.

● *Үгеҙ үкергәндә, мүскә мөскөлдәй.* Әйтем.

**МӨСЛИМӘ** [*ғәр.*] *и.* **1.** *иҫк.* Мосолман ҡатын-ҡыҙ. *Әүлиә: «Һаумы, батыр мөслимә»,— тип һүҙ ҡушты.* «Алдар менән Зөһрә».

**2.** (*баш хәреф менән*) Ҡатын-ҡыҙ исеме.

**МӨСТӘБҒӘД** [*ғәр.*] *с. иҫк. кит.* Алыҫлаштырылған, алыҫ. *Нәсихәттән мөстәбғәд ҡабул ҡайҙа, хатаһын тәхсин менән ғүмер кискән.* Аҡмулла.

**МӨСТӘБИД** [*ғәр.*] *и. иҫк. кит.* Иҙеүсе, залим. *Эй, йәштәрем! Ғәййәр булығыҙ, көллө сәид, мөстәбидтәр алдығыҙға ҡорһа ла сәд.* С. Яҡшығолов.

**МӨСТӘҒМӘЛ** [*ғәр.*] *с. иҫк. кит.* Ҡулланылған, йөрөтөлгән. *Беҙҙә мөстәғмәл ғәрәп һүҙҙәре.*

**МӨСТӘК** *и. һөйл.* Арыҡ, насар ат. *Ҡафыр тунын кейербеҙ, арбаға мөстәк егербеҙ.* М. Буранғолов.

**МӨСТӘҠИЛ** [*ғәр.*] *с. иҫк. кит.* **1.** Бер кемгә лә буйһонмаған, үҙ аллы, ирекле. *Мөстәҡил дәүләт. Мөстәҡил хөкүмәт.* ■ *Бөгөн килеп ташлап китер өсөн мөстәҡил Башҡортостан Хөкүмәте төҙөнөкмө ни беҙ?* Ф. Иҫәнғолов. *Шулай һәр кемде йомшаҡ итер алтын, йыһанда мөстәҡил хакимдер алтын.* Я. Юмаев. *Мин хәҙер мөстәҡил рәүештә хәрәкәт итергә, үҙ иркем менән йөрөргә тейешле инем.* М. Ғафури. / Башҡалар араһынан айырылып сыҡҡан, үҙенә башҡа айырым. *Хужалыҡтың мөстәҡил тармағы.* ■ *Иҡтисади фәндең тикшерә торған мәсьәләләре бик күп төрлө булғанлыҡтан, ул бер нисә тармаҡҡа таралып, һәр береһе .. мөстәҡил бер фән рәүешенә әүерелә.* Ғ. Ғисмәти.

**2.** Сит ярҙамдан башҡа, үҙ көсө менән эшләнгән, үҙаллы. *Мөстәҡил эш.*

**МӨСТӘҠИЛЛЕК** *и. иҫк.* Мөстәҡил булыу, мөстәҡил булған хәл. *Милли мөстәҡиллек. Мөстәҡиллек алыу.* ■ *Ер кодексы сығарылыу менән ҡалалар ер төҙөлөшө һәм үҙҙәренең ер хужалыҡтарын юлға һалыу эшендә мөстәҡиллек — үҙ алдарына эш күреү хоҡуғы алдылар.* «Совет Башҡортостанының ун йылы», 1929.

**МӨСТӘҠИМ** [*ғәр.*] *с. иҫк. кит.* **1.** Төҙ, тигеҙ.

**2.** *күсм.* Тоғро.

**3.** (*баш хәреф менән*) Ир-ат исеме.

□ **Мөстәҡим ҡылыу** тоғролоҡло итеү. *Хаҡлыҡ берлән ғилемде миңә мәнсаб ҡыл, ғалимдар хеҙмәтендә мөстәҡим ҡыл.* М. Өмөтбаев.

● *Ике сәҡим — бер мөстәҡим.* Мәҡәл.

**МӨСТӘМЛӘКӘ** [*ғәр.*] *и. иҫк.* Бойондороҡло ил; колония.

**МӨСТӘН** [1] *с.* Ҡыҙырынып, темеҫкенеп йөрөүсән. *Мөстән һыйыр.* ■ *Йоҡламаған сағында, [килен] мөстән шикелле өйҙән-өйгә йөрөгән, күршеләренә инеп ләстит һатып ултыра торған булған* (Әкиәттән).

**МӨСТӘН** [2] *и. диал.* Түләмә. *Мөстән тейеү. Мөстәндән үлеү.*

**МӨСТӘНЛЕК** *и.* Ҡыҙырынып, темеҫкенеп йөрөү хәле, сифаты. *Мөстәнлек ғәләмәте.*

**МӨСТӘНЛӘНЕҮ** *ҡ.* Мөстәнлек күрһәтеү; мөстән булыу. *[Бисәһе — ире хаҡында:] Бына бит, .. көҙ еттеме мөстәнләнеп сыға ла китә, сыға ла китә ауылдан.* Б. Бикбай.

**МӨСТӘНЛӘҮ** *ҡ.* Темеҫкенеп ауыл, ил ҡыҙырыу. *Мөстәнләп йөрөү.*

**МӨСТӘСНА** [*ғәр.*] *с. иҫк. кит.* Үҙенә бер башҡа, үҙенә бер төрлө. *Мөстәсна бер хәл.*

**МӨСТӘХИҠ** [*ғәр.*] *с. иҫк. кит.* Берәй нәмәгә хаҡлы, лайыҡлы. *Мин әҙәмдин артығыраҡмын, тип маҡтанды [иблис]. Шуның өсөн һәм донъяла хур вә мәкһүр булды. Тамуғ утына мөстәхиҡ булды.* М. Өмөтбаев.

**МӨСҺӨҘ** *с.* **1.** Көс, кеүәте әҙ; көсһөҙ, хәлһеҙ. *Мөсһөҙ ат.*

**2.** Тотоноуға еткеһеҙ; ҡыҫҡа, наҡыҫ. *Мөсһөҙ бау. Мөсһөҙ урын.*

**МӨСҺӨҘЛӘНЕҮ** *к* Физик яҡтан көсһөҙ булыу, йонсоуға әйләнеү; хәлһеҙләнеү. *Ауырыуҙан мөсһөҙләнеү.*

**МӨСӘ** *и.* **1.** Өлөш; киҫәк. *Бер япраҡ тигәс тә, ул бит йәйге ҙур йәшеллектең бер мөсәһе.* И. Гәрәй.

**2.** Тәндең бер өлөшө; ағза. *Көслө беләк, киң күкрәк, мыҡты, елкәләрҙең мөсәләре һәр береһе үҙенә башҡа өрөлөп тора.* Ғ. Дәүләтшин. *Һөйәкте теүәл әйләне, ағзабыҙҙы тиң итеп, ун ике мөсә яратты, һөйлә! — тип әмер әйләне, һайраған ҡыҙыл тел биреп.* Аҡмулла.

**3.** Буй-һын, кәүҙә. *Был кешенең көсө мөсәһенән үк күренеп тора.* М. Ҡулаев. *Фил мөсәлә, арыҫлан йөрәк, исеме Бабсаҡ.* «Бабсаҡ менән Күсәк».

**4.** (*йәки* **мөсә һөйәге**) Өлөшләп бүленгән ит; өлөш. *Мөсә өләшеү.* ■ *Шаҡман аш аласығына барып, ҙур ғына бер мөсә алып килде.* Ш. Насыров.

**МӨСӘЙ** *и.* Өмәселәрҙе һыйлағанда өлөшләп таратылған ит; өлөш, мөсә һөйәге. *Мөсәй өләшеү.*

**МӨСӘЛ** [*ғәр.*] *и.* Ун ике йылдан торған һәм һәр береһе айырым хайуан (сысҡан, һыйыр, барс, ҡуян, аждаһа, йылан, йылҡы, ҡуй, маймыл, тауыҡ, эт, дуңғыҙ) исеме менән аталып йөрөтөлгән йыл иҫәбе. *Сал тарих — олатай ғүмере тиҫтә-тиҫтә мөсәлдәр, быуаттар, осорҙар менән үлсәнә.* Р. Ғарипов. .. *Кеше ғүмере бер нисә мөсәл, имәндеке бер нисә быуат .. Ғаләм ғүмере — мәңгелек.* Ғ. Хөсәйенов. *[Күрәҙә — Зөһрәгә:] Егерме мөсәл йәшәй алһаң, ырыуҙаштарыңды ла таный алмаҫ инең.* «Алдар менән Зөһрә».

**МӨСӘЛЛӘМ** [*ғәр.*] *с. иҫк. кит.* **1.** Риза, ҡәнәғәт.

**2.** (*баш хәреф менән*) Ир-ат исеме.

□ **Мөсәлләм булыу** риза булыу. *Мәҙрәсәләр яңғырап тора ине, мөсәлләм булмаймын, тип ҡысҡырғанда.* М. Ғафури.

**МӨСӘЛЛӘСАТ** [*ғәр.*] *и. иҫк. кит.* Тригонометрия.

**МӨСӘННИФ** [*ғәр.*] *и. иҫк. кит.* Автор.

**МӨСӘННӘФ** [*ғәр.*] *и. иҫк. кит.* Яҙма әҫәр. *Мөсәннәф яҙыу.*

**МӨСӘТ** [*фарс.*] *с. иҫк. кит.* **1.** Иҫергән, иҫерек. *Мөсәт кеше. Мөсәт булыу.*

**2.** *күсм.* Ярһыған, ҡоторған.

□ **Мөсәт булыу** ярһыу, ҡотороу. *Килә, ти, дерелдәтеп ҡара ерҙе мөсәт булған филдәй булып ир Бабсаҡ.* «Бабсаҡ менән Күсәк».

**МӨСӘҮҮӘДӘ** [*ғәр.*] *и. иҫк. кит.* Аҡҡа күсерелмәгән яҙыу; ҡаралама. *Меңәрләгән хата менән тулы мөсәүүәдәләрҙе ғәйәт диҡҡәт менән уҡып, хаталарын дөрөҫләй инем.* М. Ғафури.

**МӨСӘХХИХ** [*ғәр.*] *и. иҫк. кит.* **1.** Төҙәтеүсе, дөрөҫләүсе.

**2.** Корректор. *Бер наборщик шәп төҙөүҙе күрһәтмәһә, бер мөсәххих күп яңылышты төҙәтмәһә, ахирәттә нишләрҙәр.* Ш. Бабич.

**МӨСӘҺӘҘ** [*ғәр.*] *с.* **1.** Өлөштән мәхрүм, өлөшһөҙ. *Мөсәһеҙ ҡалыу.*

**2.** Кәүҙәгә йәмһеҙ, килбәтһеҙ. *Мөсәһеҙ кеше. Мөсәһеҙ булыу.*

**МӨТАБИҠ** [*ғәр.*] *с. иҫк. кит.* Тап килешле; ярашлы.

**МӨТАЛӘҒӘ** [*ғәр.*] *и. иҫк кит.* Кемдең ниҙелер өйрәнеүе уҡып белеүе.

□ **Мөталәғә итеү** өйрәнеү, уҡып белеү. *[Мансур] тейешле дәрестәрҙе мөталәғә итеп .. яҙҙы еткерҙе.* Ә. Иҫәнбирҙин.

**МӨТАНАСИП** [*ғәр.*] *с. иҫк. кит.* Бер самалы, үҙ-ара тиң. *Ваҡ бурыс йәмғиәттәренән файҙа күреүҙең самаһы халыҡтың аңы менән мөтанасиптыр.* М. Ғафури.

**МӨТЛИ** *р. диал.* Бөтөнләй. *Мөтли буш һүҙҙәр.*

**МӨТӨР** *с.* Кителгән, өҙөлгән, ҡыҫҡа (ҡолаҡҡа ҡарата).

**МӨТӨРЛӘНЕҮ** *к.* **1.** Мөтөргә әйләнеү, мөтөр булыу (ҡолаҡҡа ҡарата).

**2.** *диал.* Мөнтәлеү. *Һыу буйы туғайҙарында һеҙ унда-бында .. мөтөрләнеп ҡалған тупаҡ өйәнкеләрҙе, ҡарамаларҙы күрәһегеҙ. Тол ҡатындарҙың яҙмышын хәтерләтә улар.* Х. Назаров.

**МӨТРӨЙ** *с.* Ҡолағы китек; мөтөр.

**МӨТРӘҮ** *к. диал.* Мөнтәү.

**МӨТТАЛИҒ** [*ғәр.*] *с. иҫк. кит.* Хәбәрҙар. *Бер кәм дә минең эске серҙәремә мөтталиғ түгел.* М. Ғафури.

□ **Мөтталиғ булыу** хәбәрҙар булыу, белеү.

**МӨТТӨ** *р. диал.* Бөтөнләй. *Мөттө белмәй.*

**МӨТӘҒӘДДИД** [*ғәр.*] *с. иҫк. кит.* Күп төрлө. *Мөтәғәддид нөсхәләрҙе бергә килтереп ҡара[ным].* М. Ғафури.

**МӨТӘҒӘЛЛИМ** [*ғәр.*] *и. иҫк. кит.* Өйрәнеүсе, уҡыусы; шәкерт.

**МӨТӘҒӘССИБ** [*ғәр.*] *с. иҫк. кит.* Нимәгәлер бөтә күңелен биргән. *Эшкә мөтәғәссиб.* ■ *Хәй бушлыҡтан сығыу менән ул ошо көндәрҙәге үҙгәрештәрҙе ярамаған итеп, динғә ҡаршы итеп күрһәтеү эшендә бер мөтәғәссиб руханиҙан ҡалышмай торған булды.* М. Ғафури.

**МӨТӘРЖИМ** [*ғәр.*] *и. иҫк. кит.* Тәржемәсе.

**МӨТӘРӘҠҠИ** [*ғәр.*] *с. иҫк. кит.* Алға барған, ҡаҙаныштарға ирешкән.

**МӨТӘҮКӘ** [*рус.* мутовка] *и.* **1.** Горизонталь ҡуласалы бәләкәй генә һыу тирмәне. *Шул уҡ Андрей менән Михайла балыҡ ауҙарын, мөтәүкәләрҙе, күперҙәрҙе, мәкеләрҙе яҙып, уларҙан да яһаҡ алырға теләне.* «Ағиҙел». 1966, № 12.

**2.** *с. мәғ. диал. күсм.* Бәләкәй генә, бик бәләкәй. *Мөтәүкә генә бисәһе бар.*

**МӨТӘҮӘЛЛИ** [*ғәр.*] *и. иҫк.* Мәсетте, мәҙрәсәнең хужалығын алып барыу өсөн һайлап ҡуйылған кеше. *[Вәли] мәхәлләнең иғтибарлы кешеһе, башлығы, мәсеттең мөтәүәллие булғас, йома һәм ғәйеттәргә сәллә киймәй барыуҙы килештермәй, үҙенә сәллә алды.* М. Ғафури.

**МӨТӘФӘННИН** [*ғәр.*] *и. иҫк. кит.* Күп фән белгән ғалим.

**МӨТӘХӘССИС** [*ғәр.*] *и. иҫк.* Белгес. *Земство .. мөтәхәссис булған кешеләрҙе генә үҙенә хеҙмәт итергә алалыр.* М. Ғафури.

**МӨТӘШАҒИР** [*ғәр.*] *и. иҫк. кит.* Үҙен үҙе шағир һанап, шағир булырға маташҡан кеше; ялған шағир.

**МӨТӘӘҪҪИР** [*ғәр.*] *с. иҫк. кит.* Тәьҫирләнгән. *Ғарифтың китеүенә Фәхрислам да мөтәәҫҫир кеүек күренә ине.* М. Ғафури.

□ **Мөтәәҫҫир булыу** тәьҫирләнеү.

**МӨҮӘҠҠӘТ** [*ғәр.*] *с. иҫк. кит.* Ваҡыт менән сикләнмәгән; ваҡытлы. *Мөүәккәт адрес. // Хәҙерге әхүәл мөсагәдә кылмаганлыктан, газетабыҙ был көндән иғтибаран мөүәккәт туктальп торасак.* Т. Йәнәби.

**МӨҮӘҠҠӘТӘН** [*ғәр.*] *р. иҫк. кит.* Ваҡытлыса.

**МӨҮӘРРИХ** [*ғәр.*] *и. иҫк. кит.* Тарихсы. *Кур гәрәп мөүәррихы Азияла калган башкорттар менән Европага киткән башкорттар араһын айырмай.* М. Һаҙыев.

**МӨҮӘХХИТ** [*ғәр.*] *и. иҫк. кит.* Алланы берәү тип ышанған. *Инсаниат тормошонда ниндәй хәлдәр булмаган! Купме фәйләсуф, мөжәддиттәр уларга килмәгән! Йәки пәйгәмбәр, мәүәххиттәр нәсихәт бирмәгән.* Х. Ғәбитов.

**МӨФАД** [*ғәр.*] *и. иҫк. кит.* Мәғәнә, эстәлек. *Хуп күргәс, яриәнең йыр йырлауын, шарғтың сөкүтенән жәуаз мөфад.* Аҡмулла.

**МӨФАССӘЛ** [*ғәр.*] *с. иҫк. кит.* Ентекле, тулы. *Мөфассәл аңлатма. // Земствоның ошо көнгә саклы эшләгән эштәре хакында мөфассәл яҙырга тура килһә, том-том китап яҙырга кәрәк булыр ине.* М. Ғафури.

**МӨФИД** [*ғәр.*] *с. иҫк. кит.* Файҙалы. *Мөфид бер эш.*

**МӨФӘССИР** [*ғәр.*] *и. иҫк. кит.* Аңлатып, төшөндөрөп биреүсе; комментатор. *Төхвәтуллин йырсы, бакырыусы, мөфәссир кибрия.* Ш. Бабич.

**МӨФТИ** [*ғәр.*] *и.* **1.** Төрлө мәсьәләгә дин ҡарашын белдереп, ҡарар сығарып тороусы; фәтүә биреүсе.

**2.** Мосолмандарҙағы дин идараһының башлығы. *Мөфти хәҙрәттәре.*

**МӨФТИЛЕК** *и.* Мөфти вазифаһы. *Мөфтилек вазифаһы.*

**МӨФТӘХИР** [*ғәр.*] *и. иҫк. кит.* Маҡтансыҡ.

**МӨХАКӘМӘ** [*ғәр.*] *и. иҫк. кит.* **1.** Судта ҡарау эше; хөкөм.

**2.** *күсм.* Ниҙелер тикшереү һөҙөмтәһендә барлыҡҡа килгән фекер; сығарылған һығымта. *Урындагы дәүләт сәнгәтенең хисапка алынмаган өлөшө 3—6 % кына тәшкил иткәнлектән, уны калдырыу гөмум мөхакәмәгә артык кәмселек килтермәй.* Ғ. Ғисмәти.

□ **Мөхакәмә итеү** фекер итеү, хөкөм йөрөтөү. *Садиҡ бай менән Ғариф учитель .. шул ук мәсьәлә хакында мөхакәмә итергә кереште.* М. Ғафури.

**МӨХАҠҠАҠ** [*ғәр.*] *и. иҫк. кит.* Өйрәнеүсе, тикшеренеүсе. *Уның шөһрәттә гәнуаны, мөхаккик дәррә Мәржәни.* Аҡмулла.

**МӨХАҠҠӘК** [*ғәр.*] *с. иҫк. кит.* Билдәле, дөрөҫ, шикһеҙ. *Мөхаккәк хәбәр.*

**МӨХАЛӘФӘ** [*ғәр.*] *и. иҫк. кит.* **1.** Ҡара-ҡаршы әйтелгән ант. *Мөхаләфә әйтеү.*

**2.** Ике аралағы килешеү; союз. *Шәкерттәр төрлөсә куҙгалып караган була. Ҡуҙгалыуҙарынан артык файҙа, мөхаләфәләренән зарар күренмәй.* М. Ғафури.

**МӨХАТ** [*ғәр.*] *с. иҫк. кит.* Кәртәле, ҡоймалы. *Мөхат ихата.*

□ **Мөхат итеү** кәртәләү, ҡоймалау. *Бина ителде мөхат.* С. Яҡшығолов.

**МӨХБИР** [*ғәр.*] *и. иҫк. кит.* **1.** Хәбәр биреүсе, хәбәр килтереүсе, хәбәрләшеүсе.

**2.** Хәбәрсе, корреспондент. *Газета мөхбире.*

**МӨХИБ** [*ғәр.*] *с. иҫк. кит.* Яратҡан, һөйгән. *Мөхиб кеше.*

♦ **Мөхиббел ватан** илһөйәр, патриот. **Мөхиббел нәфис** үҙен генә яратҡан кеше; эгоист.

**МӨХИТ** [*ғәр.*] *и.* **1.** Тәбиғәт шарты, тирә-йүн; урата. *Беҙҙе уратып алган мөхит.* ■ *Организмдың үҙенсәлекле формалашыуында нәҫел-нәсәпселек менән мөхиттең үҙ-ара мөнәсәбәте ҙур гына әһәмиәткә эйә.* «Ағиҙел», 1966, № 3.

**2.** Кеше йәшәгән социаль-көнкүреш шарт; урата. *Мөхитем булманы йәнгә көфү, бәс шуның өсөн донъяга минән мөкафәт: кых, тфу!* Ш. Бабич. / Йәшәүҙең социаль-көнкүреш шарттары, дөйөм профессия, шөғөл менән уртаҡ бәйләнгән кешеләр. *Эшселәр мөхите. Әҙәби мөхит.*

♦ **Ҙур мөхит диңгеҙе** *иҫк.* океан. *Ҙур мөхит диңгеҙе ярҙарында йәшәгән халыктар һаны Атлантик ярҙарында йәшәгән халыктарҙан артык булһа ла Ҙур мөхит диңгеҙе сауҙа юлы булыуҙа икенсе дәрәжәлә.* Ғ. Ғисмәти.

**МӨХКӘМ** [*ғәр.*] *с. иҫк. кит.* **1.** Ныҡлы, ныҡ. *Ҡәбер тигән мөхкәм һарай, ишеге юк, кереп булмай, эсендәге әруахтарҙың хәлдәрен белеп булмай* (Бәйеттән).

**2.** Аныҡ, дөрөҫ. *Донъяга мөхкәм караш.*

**МӨХЛИС** [*ғәр.*] *с. иҫк.* **1.** Ихлас, тоғро. *Мөхлис кеше. Мөхлис булыу.*

**2.** (*баш хәреф менән*) Ир-ат исеме.

**МӨХӨТҺӨНӨҮ** *к. диал.* Мөрхәтһенеү. *Ашты мөхөтһөнөү.*

**МӨХРИБ** [*ғәр.*] *и. иҫк. кит.* Ҡыйратыусы, һәләк итеүсе, зыян килтереүсе. *Ук етмәҫлек мөхибтәргә юк котолоу .. кылыс илә үҙ канына тонсоктороу* (Бәйеттән).

**МӨХСИН** [*ғәр.*] *и. иҫк. кит.* **1.** Изгелекле, яҡшылыҡ эшләүсе, ярҙамсыл. *Мөхсин кеше. Мөхсин булыу.*

**2.** (*баш хәреф менән*) Ир-ат исеме.

**МӨХСӨЛ** [*ғәр.*] *с. диал.* Етешһеҙ, мохтаж. *Кейемгә мөхсөл булыу.*

**МӨХСӨЛЛӨК** *и. диал.* Юҡлыҡ, мохтажлыҡ. *Мөхсөллөктә йәшәү. Беҙҙең гүмер мөхсөллөк менән үтте инде.*

**МӨХТАРИҒ** [*ғәр.*] *и. иҫк. кит.* Уйлап табыусы. *Бер мөхтариг үҙенең сәнгәте тураһында фекер эшләтә.* М. Ғафури.

**МӨХТӘБӘР** [*ғәр.*] *с. иҫк. кит.* **1.** Күренекле, хөрмәтле. *Мөхтәбәр кунак.* ■ *Мөхәммәтсәлим [Өмөтбаев] төрлө мәжлес күргән вә шул вакыттагы мөхтәбәр гаиләлә үҫкән.* Р. Фәхретдинов.

**2.** Күҙгә алырлыҡ, күрмәлекле. *Мөхтәбәр кеше.*

**МӨХТӘЛ** [*ғәр.*] с. иҫк. кит. **1.** Хәйләкәр. *Мөхтәл кеше. Мөхтәл булыу.*

**2.** *и. мәғ.* Хәйлә, алдыҡ. *Бер мөхтәлдәргә төштө ниһәң һис бер генә сыкмай уңайы* (Халыҡ йырынан).

**МӨХТӘЛИФ** [*ғәр.*] *с. иҫк. кит.* **1.** Төрлө-төрлө, һәр төрлө. *Мөхтәлиф уйҙар.*

**2.** Ҡаршылыҡлы, бәхәсле. *Мөхтәлиф мәсьәлә.*

**МӨХТӘРӘМ** [*ғәр.*] *с. иҫк. кит.* **1.** Хөрмәтле, хөрмәт итеlә торған. *Хәмит бабай .. ҡулын күтәреп: «Мөхтәрәм суд әһелдәре! Миңә Шомло күл вакиғаһы тураһында бер-ике ауыҙ һүҙ әйтергә рөхсәт итегеҙ»,— тине.* И. Насыри.

**2.** (*баш хәреф менән*) Ир-ат исеме.

**МӨХТӘСИБ** [*ғәр.*] *и. иҫк. кит.* **1.** Шәриғәттең дөрөҫ үтәлешен ҡарап торған күҙәтсе.

**2.** (*баш хәреф менән*) Ир-ат исеме.

**МӨХӘБ** [*ғәр.*] *с. кит.* Күңелгә ләззәт биргән, рәхәт. *Мөхәб булыу.* ■ *Йыр йырлауҡайҙары мөхәб икән, йыр ҡәҙерен белеп йырлаһаң* (Халыҡ йырынан).

**МӨХӘББӘТ** [*ғәр.*] *и.* **1.** Кемгә йәки нимәгәлер булған яратыу тойғоһо. *Әсәгә булған мөхәббәт. Тыуған илгә булған мөхәббәт.* ■ *Ватанға булған мөхәббәт йылы бирә тәнемә. Илен һөйгән кеше генә ирешә теләгенә.* Ғ. Байбурин. *Миндә уға мең-мең мөхәббәт бар, миндә уға мең-мең һөйөү бар; шуға әйтәм гүмерем һиңә булһын, нигеҙен Ленин һалған партия!* Х. Ҡунаҡбай.

**2.** Ике енес кешеләре араһындағы яратыу хисе; ғишыҡ. *Тәүге мөхәббәт. Саф мөхәббәт. Ысын мөхәббәт.* ■ *Мөхәббәт ул башта ҡыҙ-егеткә яҡын дуҫлыҡ ҡына була икән.* Ғ. Сәләм.

**3.** Берәй нәмә менән мауығыу йәки ҡыҙыҡһыныу тойғоһо; нимәгәлер ҡарата булған әске ынтылыш. *Сәнғәткә булған мөхәббәт. Театрға булған мөхәббәт.* ■ *Китапҡа булған мөхәббәт уны [Тәнзиләне] Өфө китапхана техникумына алып килде.* Д. Исламов.

● *Матурлыҡ түйҙа кәрәк, мөхәббәт көн дә кәрәк.* Әйтем.

**МӨХӘББӘТЛЕ** *с.* Күңелгә яҡын; һөйкөмлө. *Мөхәббәтле кеше.* ■ *Таң яҡтыһында уларҙың шәүләләре айырым серле, айырым мөхәббәтле күренде.* Д. Юлтый.

**МӨХӘББӘТҺЕҘ** *с.* Күңелгә ятышһыҙ; һөйкөмһөҙ. *Мөхәббәтһеҙ кеше. [Ҡунаҡбикә:] Йә, аҙман, ҡайҙа йөрөнөң? Көнө буйы өйҙә тормайһың, мөхәббәтһеҙ. Тамам күҙҙәрең аҡайған инде.* Д. Юлтый.

**МӨХӘЛ** [*ғәр.*] *с. иҫк. кит.* Мөмкин булмаған. *Хан бабайҙың һорағаны шәм сыраҡ таш ине, ул ваҡыт был ташты табыу бик мөхәл бер эш ине* (Әкиәттән).

**МӨХӘММӘҘИ** [*ғәр.*] *с. иҫк. кит.* Мөхәммәт динендәге; мосолман. // *Динен ташламаған мөхәммәҙиҙәргә өҫтәмә яһаҡ һалалар.* «Батырша-ның хаты».

**МӨХӘММӘҘИӘ** [*ғәр.*] *и. иҫк. кит.* Шиғыр менән яҙылған элекке дини китап. *Шиғырҙарҙы зиләйлүк.., мөхәммәҙиә көйҙәре, яхуд башҡа еңелерәк көйҙәр менән йырларға мөмкин.* М. Фәйзи.

**МӨХӘММӘС** [*ғәр.*] *и. иҫк. кит.* **1.** Бишмөйөш.

**2.** *әҙ.* Биш юллы шиғыр.

**МӨХӘРРИР** [*ғәр.*] *и. иҫк.* **1.** Редактор. *Газета мөхәррире.* ■ *«Белем» — ғилми, тәрбиәүи, сәйәси айлыҡ журнал. Башта мөхәррире коллегия ине, хәҙерге көндә мөхәррире Имай Насыри.* Т. Йәнәби.

**2.** Яҙыусы, журналист.

**МӨХӘРРИРЛЕК** *и.* **1.** Мөхәррир вазифаһы.

**2.** Яҙыусы, журналист вазифаһы.

**МӨХӘРРӘМ** [*ғәр.*] *и. иҫк.* **1.** Ай календарының беренсе айы (*ҡар.* **календарь**). *Һижрә йыл иҫәбенең тәүге айы булған мөхәррәмдең беренсе көнөндә яңы йыл байрамы үткәрелгән.* «Совет Башҡортостаны», 1970, 17 ноябрь.

**2.** (*баш хәреф менән*) Ир-ат исеме.

**МӨҺАБӘТ** [*ғәр.*] *с.* **1.** Тышҡы күренеше ҙур, күркле. *Мөһабәт бина. Мөһабәт һәйкәл.* ■ *Тау бик бейек, диңгеҙ иһә бик киң — икеһе лә шундай мөһабәт!* Н. Нәжми. *Ай, Урал мин, Урал мин .. илгә дошман килгәндә һыҡтап ҡарап тормаған,— мәғрур, бөйөк Урал мин, мөһабәт, киң Урал мин.* Р. Ниғмәти.

**2.** Ҙур, күркәм ҡиәфәтле; олпатлы. *Хатип.. иң ҙур кәүҙәле кешеләрҙең береһе һәм ҡарап тороуға мөһабәт ине.* М. Ғафури. // *Лейтенант өҫ-башын һалып, зифа кәүҙәһен туп-тура тотоп, бик мөһабәт килеп ултыра.* Ғ. Ғүмәр.

**МӨҺАБӘТЛЕ** *с. ҡар.* **мөһабәт.**

**МӨҺАБӘТЛЕК** *и.* Мөһабәт булыу сифаты. *Салауат Юлаевтың киң яуырынлы фигураһынан ниндәйҙер мөһабәтлек һәм һөйкөмлөлөк һиҙелеп тора ине.* С. Галин. *Сәнғәт, хас диңгеҙ кеүек үк, мөһабәтлелеге һәм гүзәллеге менән кешеләрҙең күңелен үҙенә тарта.* М. Садикова.

**МӨҺАЖИМ** [*ғәр.*] *и. иҫк. кит.* Һөжүм итеүсе.

**МӨҺАЖИР** [*ғәр.*] *и. иҫк. кит.* Ситтән күсеп килгән кеше; килмешәк. иммигрант. *Башҡорттар яңынан хәл йыйғанға хәтле ситтән мөмкин тиклем күберәк мөһажир күсереү саралары күрелә башланы.* Ғ. Фәхретдинов. *Бик күп ваҡыттарға ҡәҙәр мөһажирҙар менән башҡорттар тыныс тора алманы.* М. Һаҙыев.

**МӨҺАЖӘМӘ** [*ғәр.*] *и. иҫк. кит.* Ҡара-ҡаршы һөжүм. *Мөһажәмә итеү.*

**МӨҺИМ** [*ғәр.*] *с.* **1.** Ҙур әһәмиәткә эйә; әһәмиәтле. *Мөһим бурыс. Мөһим мәсьәлә. Мөһим сәбәп. Мөһим эш. Эште белеп эшләү мөһим.* ■ *Дәүләт тормошоноң айырыуса мөһим мәсьәләләре бөтә халыҡ тикшереүенә сығарыла, шулай уҡ бөтә халыҡтың тауыш биреүенә [референдумға] ҡуйыла.* Башҡорт АССР-ының Конституцияһы, 1984. *Ағиҙел ҙур һыу сығанағы, мөһим һыу юлы булып хеҙмәт итә.* «Совет Башҡортостаны», 1970, 25 март.

**2.** Ғорурлыҡ билдәһенә эйә; олпатлы. *Мөһим ҡиәфәт.* ■ *Үмәр ҙә мөһим төҫ менән һүҙгә ҡушыла.* Һ. Дәүләтшина. // *Ҡабул итте көрәгәнe Билал ҡарт, мөһим генә мыйыҡ осон бөтөрөп.* Р. Сафин.

**МӨҺИМЛЕК** *и.* Мөһим булыу. *Мәсьәләнең мөһимлеге. Эштең мөһимлеге.*

**МӨҺЛИК** [*ғәр.*] *с. иҫк. кит.* Һәләкәт килтерерлек; һәләкәтле, үлемесле. *Күрмәйһегеҙме, алда мөһлик баҙҙар, һеҙ ауырға сак-сак тораһығыҙ!* Д. Юлтый.

**МӨҺЛӘТ** [*ғәр.*] *и. иҫк.* Берәй сәбәп менән кисектерелгән билдәле ваҡыт; кисектереүгә бирелгән рөхсәт. *Сенат контораһы Мәскәүҙәге ҡорал кибеттәренән быңдай ҡылыстар таба алманы вә етештереп биреү өсөн бер ай мөһләт һораны.* М. Һаҙыев.

**МӨҺӨР** [*ғәр.*] *и.* **1.** *иҫк.* Мисәт. *Счетовод бер миһырбанлы әҙәм булып сыкты: колхозда өс көн торҙо, тип мөһөрөн һукты ла бирҙе.* Ғ. Шәрипов. *Кара, бына мөһөрө: касан, кайҙа тукылған, төрө, сифаты ниндәй — бөтәһе лә һуғылған.* «Ағиҙел», 1968, № 7. **Мөһөр баҫыу** тамға һалыу. *Дошман килә ерҙе иҙеп, бар тип белә игенеңде!.. Ләкин курәм, йөҙҙәренә әжәл үҙе мөһөр баҫкан.* М. Кәрим.

**2.** Кейемгә сигеп эшләнгән туңәрәк биҙәк. / *Кайыш сбруйҙы биҙәр өсөн куйылған йомро-йомро көмөш калай.*

♦ **Кара мөһөр** хурлыклы исем. *Донъя куләмендә йөҙҙәренә [хәсистәр] кара мөһөр баҫты үҙҙәре.* Б. Вәлит.

**МӨҺӨРДАР** [*ғәр.* + *фарс.*] *и. иҫк. кит.* Идараның мөһөр һаклап, мөһөр баҫып торған кешеһе.

**МӨҺӨРЛӨ** *с.* **1.** *иҫк.* Мөһөр (1 мәғ.) баҫылған; мөһөрө булған. *Теге барин кеҫәһенән мөһөрлө кағыҙ килтереп сығарған* (Хикәйәттән). *Төрмәләрҙең ишеге мөһөрлө, тәҙрәләре уның тимерле* (Халык йырынан). **Мөһөрлө балдак** кашына мөһөр төшөрөлгән балдак.

**2.** Мөһөр (2 мәғ.) менән биҙәлгән. *Мөһөрлө елән. Мөһөрлө сәкмән.*

♦ **Мөһөрлө акык** йөрәк һүрәтенә килтереп, көмөштән бәләкәй генә ай, йондоҙ куйып эшләнгән акык ташы (ырым буйынса, йөрәк ауырыуынан дауа итеп кулланыла).

**МӨҺӨРЛӘНЕҮ** *к. төш. кар.* **мөһөрләү.** *Бер ят әҙәм алыҫ ерҙән килеп етте.. Бабсак батыр каршыһына тура килеп, кулына мөһөрләнгән хатты бирҙе.* «Бабсак менән Кусәк».

**МӨҺӨРЛӘҮ** *к.* **1.** *иҫк.* Кағыҙға мөһөр (1 мәғ.) һалыу. *Документты мөһөрләү.* ■ *Батша хатты яҙа һалып мөһөрләгән дә тиҙ генә башкорттарға ат саптырған ти* (Әкиәттән).

**2.** Мөһөр (2 мәғ.) төшөрөү, мөһөрлө итеү. *[Әсәһе — Һыуһылыуға] ебәк ептәр менән мөһөрләп сигеп, шау ука итеп, тәңкәле елән, селтәр, кашмау яһаған* (Әкиәттән).

**МӨҺӘНДИС** [*ғәр.*] *и. иҫк. кит.* Инженер. *Һуҙ куҙғатыр ул [Мәржәни] ир аҫылы тәрән ерҙән, хоҙайым фәрәсәтле йөрәк биргән. Мөһәндистәр ҙә һиҙмәгән ерҙән һиҙеп, сығарҙы ул татлы һыуҙы тәрән ерҙән.* Акмулла.

**МӨҺӘТҺЕНЕҮ** *к. диал.* Мөрхәтһенеү.

**МӨШАҒӘРӘ** [*ғәр.*] *и. иҫк. кит.* Шиғыр ярышы; әйтеш.

**МӨШАР** [*ғәр.*] *с. иҫк. кит.* Ишара ителгән, ымлап күрһәтелгән.

♦ **Мөшар иләйһи** юғарыла күрһәтелгән, әйтелгән.

**МӨШАҺИТ** [*ғәр.*] *и. иҫк. кит. кар.* **шаһит.**

**МӨШИР** [*ғәр.*] *и. иҫк. кит.* Кәңәшсе. *Мөшир булыу.*

**МӨШКӨЛ** [*ғәр.*] *с.* Кыйын, ауыр; хөрт. *Мөшкөл хәл.* ■ *Эштәр мөшкөл беҙҙең, алған йөкләмәләрҙе үтәп бөтөрөп булмай.* М. Кәрим. *Рәхәт заман үтеп китте, мөшкөл заман килеп етте* (Бәйеттән).

**МӨШКӨЛЛӨК** *с.* Мөшкөл хәл. *Мөшкөллөккә төшөү. Мөшкөллөктә йәшәү.*

**МӨШКӨЛЛӘНЕҮ** *к.* Насарға, мөшкөлгә әйләнеү; ауырлашыу, хөртәйеү. *Эш мөшкөлләнде. Хәлдәр мөшкөлләнде.* ■ *Оборона тотоусыларҙың да хәле бик мөшкөлләнеп киткән сактар булғылаиы.* Д. Исламов. *Саматтың мәктәптә укыу ягы мөшкөлләнә башлагас, өйгә хәбәр иттеләр.* К. Мәргән. *Электән фәкир Сакмай ауылы һуғыш йылдарында бөтөнләй мөшкөлләнде.* Я. Хамматов.

**МӨШКӨЛЛӘШЕҮ** *к. кар.* **мөшкөлләнеү.** *Эш мөшкөлләшә. Ауыр минуттар килә.* Ғ. Ибраһим-Кыпсак.

**МӨШКӨНСӨЛӨК** *и. диал.* Ярлылык. *Мөшкөнсөлөк баҫыу.*

**МӨШКӘ** *и.* **1.** Тирмән ташына ашлык коя торған киң ауыҙлы төбө тишек йәшник. *Тирмән мөшкәһе.* ■ *Тимерказык тирмән эсенә инеп китте. Михайла мөшкәгә һуңгы токто бушатып тора ине.* Ғ. Ибраһимов.

**2.** *һөйл. кар.* **бункер** 1. *Комбайн мөшкәһе. Елгәргес мөшкәһе.*

**3.** *диал. кар.* **морондок**[1] 3. *Мөшкә кейҙереү. Мөшкә һалыу.*

**МӨШКӘЙЕҮ** *к. һөйл.* Күңелһеҙләнеү. *Ауырығанлыктан мөшкәйеп йөрөү.*

**МӨШКӘЛӘНДЕРЕҮ** *к. диал.* Ослайтыу (ауыҙҙы). *[Кыҙ] аҫкы иренен мөшкәләндереп өҫкә өрә.* К. Ибәтуллин.

**МӨШКӘНДӘҮ** *к. диал.* Бөксәнләү. *Мөшкәндәп йөрөү.*

**МӨШКӘТ**[1] [*рус.* мускатник] *и.* **1.** Ябык орлоклолар ғаиләһенә караған хуш еҫле сәтләүек бирә торған йылы як ағасы. *Мөшкәт ағасы. Мөшкәт япрағы.*

**2.** Шул ағастың сәтләүеге. *Мөшкәт сәтләүеге.*

**МӨШКӘТ**[2] [*рус.* мускат ⟨ *фр.*] *и.* **1.** Йөҙөм емешенең бер төрө. *Ал мөшкәт. Ак мөшкәт.*

**2.** Шул йөҙөмдән эшләнгән шарап. *Мөшкәт эсеү.*

**МӨШКӘТ**[3] *и.* Сайыр ағыҙыу өсөн карағайға элеп куйыла торған һауыт. *Сайырҙы мөшкәткә ағыҙыу.* ■ *Әнүәр .. карағайҙың итләс тәненә мыйык тарта, урғанан һыҙык уткәрә лә аҫкы осона мөшкәт каҙап куя. Алтын кеүек һут мөшкәткә ағыт төшө.* З. Ураксин.

**МӨШКӘТ**[4] *и. диал.* **1.** *кар.* **мөшкә** 1. *Тирмән мөшкәте.*

**2.** *кар.* **морондок**[1] 3. *Быҙауға мөшкәт кейҙереү.*

**МӨШКӘТ**[5] *и. диал.* Буҫер. *Мөшкәте йонсота.*

**МӨШӨГӨР** *и. диал.* Мөншөгөр. *Мөшөгөр ояһы.*

**МӨШРИК** [*ғәр.*] *и. иҫк. кит.* Ислам динен тотмаған, күп аллаға ышанған кеше; мәжүси. *[Хәҙрәт:] Пәйғәмбәребеҙ Мөхәммәт ғәлиәссәләм дә һуғышкан. Эйе, мөшриктәр менән һуғышкан.* Ғ. Хәйри.

● *Иҫерек кеше — мөшрик кеше.* Әйтем.

**МӨШТИНКӘ** *с. диал.* Мөштөм. *Бер бәләкәй генә, мөштинкә генә кеше осраны.* Ш. Насыров.

**МӨШТӨК** [*рус.* мундштук ⟨ *нем.*] *и.* **1.** Төрөлгән тәмәкене кейҙереп тарта торған нәмә. *Һөйәк мөштөк. Гәрәбә мөштөк.*

**2.** Музыка коралының ауыҙға куя торған өлөшө. *Флейта мөштөгө.*

**МӨШТӨКӘЙ** *с. кар.* **мөштөм.** *Бындағы аксарлактар беҙҙең Ыйык буйындағы аксарлактар*

*һымаҡ мөштөкәй түгел, ә ут кеүек йылғыр. Ҡулында тотоп торған балыкты тартып алып китәләр.* И. Насыри.

**МӨШТӨМ** *с.* Һөйләшеп бармаған, тыныс. *Мөштөм кеше. Мөштөм булыу. // Мөштөм йәшәү. Быгаса мөштөм генә йөрөгән был бәләкәй ҡыҙҙың [Фәриҙәнең] .. батырлығы, тәүге тапкыр ишетелгән яңғырауыклы тауышы бар кешене лә таң ҡалдырҙы.* Ф. Рәхимғолова.

**МӨШТӘЙЕҮ** *ҡ.* Күңелһеҙ, тын, меҫкен ҡиәфәт алыу. *Мөштәйеп йөрөү. Мөштәйеп ҡалыу.* ■ *— Һин нимә, балтаң һыуға төшкән һымаҡ, мөштәйеп ултыраһың?* Ш. Янбаев.

**МӨШТӘЙЕШЕҮ** *ҡ. урт. ҡар.* **мөштәйеү**. *Мөштәйешеп ултырыу. Мөштәйешеп йөрөү.*

**МӨШТӘРИ** [*ғәр.*] (*баш хәреф менән*) *и. иҫк.* Ҡояш системаһында ҡояштан бишенсе торған планета; Юпитер.

**МӨШТӘРӘК** [*ғәр.*] *с. иҫк. кит.* Уртаҡ. *Мөштәрәк бурыс. // Былар бер маҡсатта мөштәрәк була алмағанлыктан, бергә һағынып көтөрлөк эҙ ҡалдыра алмай ине.* В. Солтанов.

**МӨШФИҠ** [*ғәр.*] *с. иҫк. кит.* Шәфҡәтле. *Мөшфиҡ анаһының ҡосағынан .. айырылған Мансурҙың уҡый торған мәҙрәсәһен уҡыусылар аңлағандыр.* Ә. Иҫәнбирҙин.

**МӨШӘ** *и. диал.* Мөсәл.

**МӨШӘРРӘФ** [*ғәр.*] *с. иҫк. кит.* Хөрмәтле, абруйлы. *Мөшәррәф булыу. Мөшәррәф ҡылыу.* ■ *[Ғилметдин Туҡайға:] — Хәсән бай ҙа һеҙҙең шиғырҙарығыҙҙы нәшер итеү менән мөшәррәф булырға .. теләй.* С. Ҡудаш.

**МӨЬМИН** [*ғәр.*] *и. иҫк.* Ислам динен тотҡан кеше; мосолман. *Мөьмин булыу. // Көрьән әйткән: әй һин, бәндә, яныҙһың тамуҡ төбөндә, һин яһау хилаф мөьмингә.* Х. Ғиләжев. *Туп ярылып күп һалдатты һәләк итә, мөьмин әҙәм иман менән үтһен инде* (Вәйеттән).

**МӨӘДДИБ** [*ғәр.*] *и. иҫк. кит.* Әҙәпкә өйрәтеүсе, тәрбиәсе. *Мөәддиб булыу.*

**МӨӘДДӘБ** [*ғәр.*] *с. иҫк. кит.* Әҙәпле, тәрбиәле. *Мөәддәб кеше.*

**МӨӘЗИН** *и. ҡар.* **мәзин.**

**МӨӘЛЛИФ** [*ғәр.*] *и. иҫк. кит.* Китап яҙыусы.

**МӨӘННӘС** [*ғәр.*] *и. иҫк. кит.* Ҡатын-ҡыҙ енесенә мөнәсәбәтле грамматик категория.

**МӨӘССӘСӘ** [*ғәр.*] *и. иҫк. кит.* Дәүләт ойошмаһы, учреждение. *Почта инде хат ташыусы мөәссәсә генә түгел, ул мәҙәниәт тарата, хужалыкты үҫтереүгә, кешеләрҙең аңын арттырыуға ярҙам итә.* Ғ. Ғисмәти.

**МӨӘҪҪИР** [*ғәр.*] *с. иҫк. кит.* Тәьҫирле, йөрәк әрнеткес, йөрәк тетрәткес. *Мөәҫҫир хәл.*

**МӨӘҪҪӘР** [*ғәр.*] *с. иҫк. кит.* Тәьҫиргә, йоғонтоға бирелгән; тәьҫирләндерелгән.

□ **Мөәҫҫәр булыу** тәьҫирләнеү. *Ғәлиәнең был илауынан .. мөәҫҫәр булған Мансур ҙа иларға кереште.* Ә. Иҫәнбирҙин.

**МУА́Р** [*рус.* ⟨*фр.*] *и.* Ебәк туҡыманың бер төрө. *Ҡара муар. // Муар күлдәк. Муар таҫма.*

**МУҘЫЙ** *и. йыйн иҫк.* Йоғошло ауырыу тарат ҡан бөжәктәр (бет, талпан һ. б.) *Муҙый менән көрәш.*

**МУЖИ́К** [*рус.*] *и.* **1.** *иҫк.* Крәҫтиән. *Мужик бара баҫыуға ашлыҡтарын ташыуға, аты арыҡ, йөрөмәгәс, бер ҡыҫкыра, бер һуға.* М. Ғафури.

**2.** *һөйл.* Мәҙәниәтһеҙ, ҡара кеше.

**МУ́ЗА** [*рус.* ⟨*гр.*] *и.* **1.** Грек мифологияһында: фән һәм сәнғәтте ҡурсалаған туғыҙ ҡатын алланың береһе.

**2.** *күсм.* Илһам сығанағы, илһам; ижад дәрте. *Шиғриәт һарайы алдына мин дә килеп атым бәйләнем. Муза ҡыҙы өҙөлөп һөйәм тиһә, сыҡмаҫ инем мин дә әйләнеп.* М. Иҙелбаев. / Шағирҙың, художниктың музыканттың һ. б. үҙенә бер үҙенсәлекле ижады. *1910 йылда яҙылған был шиғыр [«Туғайҙа йәйге кис»] Д. Юлтыйҙың реакция ҡыҫымында интеккән музаһын асыҡ кәүҙәләндерә.* Ә. Хәкимов.

**МУЗЕ́Й** [*рус.* ⟨ *гр.*] *и.* Тарихи ҡомартҡыларҙы, сәнғәт әҫәрҙәрен, ғилми коллекцияларҙы һ. б. нәмәләрҙе йыйып һаҡлай һәм күргәҙмәгә ҡуя торған ойошма. *Ленин музейы. Ил өйрәнеү музейы. Тарихи музей.* **Музей йорт** күренекле бер кешенең тормошона нығ бәйле булып, шуның музейына әйләндерелгән йорт. *Өфөләге Ленин музей йорто.* **Музей ҡала** музейға әйләндерелгән ҡала.

**МУ́ЗЫКА** [*рус.* ⟨ *гр.*] *и.* Хис-тойғоно, ниндәйҙер бер идеяны көйлө тауыш аша сағылдырған сәнғәт төрө. *Инструменталь музыка. Классик музыка. Симфоник музыка. Музыка теорияһы.* / Шул сәнғәткә ҡараған әҫәр(ҙәр). *Заһир Исмәғилев музыкаһы. Хөсәин Әхмәтов музыкаһы.*

**МУЗЫКАЛЛЕК** *и.* **1.** Музыкаға булған һәләтлек. *Балалағы музыкаллек.*

**2.** Ҡолаҡҡа ятышлы әйтелеш; көйлөлөк, аһәңлелек, *Хикәйә яҙғанда беҙ күп ваҡыт бер уҡ һүҙҙе йыш ҡабатлайбыҙ. Был хәл әҙәби телдең музыкаллеген боҙа, уны йәмһеҙләй.* Ә. Вәли.

**МУЗЫКАЛЬ** [*рус.* музыкальный] *с.* **1.** Музыкаға мөнәсәбәтле. *Музыкаль инструмент. Музыкаль мәктәп. Музыкаль тәрбиә. Музыкаль әҫәр.* / Музыка ярҙамында кәүҙәләндерелгән. *Музыкаль образ.*

**2.** Музыкаға һәләтле, музыканы яҡшы аңлаған. *Музыкаль кеше.*

**3.** Ҡолаҡҡа ятышлы, нескә көйлө; аһәңле. *Музыкаль тауыштар.*

♦ **Музыкаль драма** музыка мөһим урынды алып торған драма әҫәре. **Музыкаль комедия** музыка менән башҡарылған комедия; оперетта.

**МУЗЫКА́НТ** [*рус.*] *и.* **1.** Музыка белгесе.

**2.** Музыка ҡоралында уйнаған кеше. *Башҡортостанда тәү тапҡыр РСФСР композиторҙары Союзының пленумы үткәрелде, унда беҙҙең музыканттарыбыҙҙың бик күп әҫәрҙәре илебеҙҙең күренекле композиторҙарының юғары баһаһын алды.* Р. Хәкимов.

**МУЙНАҠ** *с.* **1.** Аҡ муйынлы. *Муйнаҡ айыу. Муйнаҡ эт.* ■ *Һары ғына була һандуғас, ҡара муйнаҡ була ҡарлуғас* (Халыҡ йырынан).

**2.** (*баш хәреф менән*) Эт исеме. / *күсм.* Кешене мыҫҡыллағанда әйтелә. *«Бәрәкалла! тип кикерә мулланың муйнаҡтары.* С. Ҡулибай.

♦ **Ҡара муйнаҡ** аҡ муйынлы ҡара айыу.

**МУЙТ** *и. һөйл.* **1.** Отошло уйында һалына торған аҡса йәки нәмә. *Муйт һалыу.*

**2.** Отошло уйындың бер бүлеме. *Бер муйт уйнау.*

**МУЙЫЛ** *и.* **1.** Гөлйемеш сәскәләләр ғаиләһенә ҡараған аҡ сәскәле, ваҡ ҡына ҡара емешле ағас. *Муйыл ағасы. Муйыл сәскәһе.* ■ *Муйыл сәскә атҡан эркелеп, күктә йәш ай тора бер телем.* М. Кәрим.

**2.** Шул ағастың емеше. *Кипкән муйыл. Тартҡан муйыл. Муйыл бәлеше.*

◆ **Эт муйылы** сәнскеле, ҡара ҡабыҡлы, йомшаҡ ҡара емешле туғай ағасы.

**МУЙЫЛЛЫ** *с.* **1.** Муйыл күп үҫкән, муйыл ағасы күп булған. *Муйыллы урын.*

**2.** Муйыл (2 мәғ.) ҡушылған, муйыл ҡушып әҙерләнгән. *Муйыллы май.*

**МУЙЫЛЛЫҠ** *и.* Муйыл ағасы күп үҫкән урын. *Ә үрҙә .. ниндәй матур муйыллыҡ ине. Яҙ еттеме — сәскәгә күмелгән әрәмәнән ауыл хуш еҫкә күмелер ине.* «Совет Башҡортостаны», 1965, 4 ноябрь.

**МУЙЫН** *и.* **1.** Башты кәүҙәгә тоташтырған тән өлөшө. *Муйынға аҫылыныу. Муйынға аҫыу. Муйындан ҡосаҡлау. Муйынды бороу. Муйынды һоноу. Нәҙек муйынлы. Ҡыҫҡа муйынлы.* ■ *Йылҡылар кешнәй. Һөлөк кеүек шыма, һимеҙ айғырҙар муйындарын дуғаландырып бейәләр артынан йүгерә.* Ш. Шәһәр. **Муйын төйөнө** *диал.* күмәгәй.

**2.** *күсм.* Һауыт-һабаның ауыҙы менән ҡорһағы араһындағы нәҙек өлөшө. *Оҙон муйынлы көршәк.*

**3.** *геогр.* Ҡоро ер өлөштәрен тоташтырып торған тар ғына ер һыҙаты. *Йылға муйынының ағышы аҡрыная, һыу төбөнә төрлө ләм, ком ултыра бара.* «Совет Башҡортостаны», 1970, 4 ноябрь.

◆ **Дөйә муйыны** *этн.* 1) сигелгән бер биҙәк төрө; 2) дөйәнең муйын тиреһенән тегелгән һауыт. **Дөйә муйынынан кәкре** насар эш, ҡылыҡ тураһында әйтелә. **Китте баш ҡалды муйын һерәйеп** баш юғалды тигән мәғәнәлә әйтелә. **Муйындан батыу** (*йәки* **сумыу**) нимәгәлер ныҡ күмелеү. *Муйындан бурысҡа батыу. Муйындан бысраҡҡа батыу. Муйындан эшкә сумыу.* **Муйындан һығыу** ай-байға ҡуймай, көсләшеү. **Муйынына ҡамыт теймәгән** *кар.* **тейеү. Муйынды киҫеү** сараһыҙ итеү, йонсотоу. *Уйнар ҙа инем, көлөр ҙә инем, фәҡирлеккәй киҫә муйынды* (Халыҡ йырынан). **Муйынға аҫылыныу** йәбешеү, тағылыу. *Ул [Фатима] ир-ат муйынына аҫылынып бара торған шаталаҡ бисә түгел ине.* Б. Бикбай. **Муйыны аҫҡа килгере** ҡарғағанда әйтелә. **[Кемдең йәки ниҙеңдер] муйынын бороу** үлтереү. **Муйыныңды өҙөр(мөн)** ҡурҡытҡанда, янағанда әйтелә. **Үҙе(м) муйын, үҙе(м) баш** донъяға бер үҙе(м) хужа тигән мәғәнәлә әйтелә. *Киноларҙан ҡайтыуыма өҫтәлемдә йылы аш. Маҡтана тип уйламағыҙ үҙем муйын, үҙем баш!* Ҡ. Даян. **Эш муйындан** эш бик күп.

● *Ир — баш, ҡатын — муйын.* Әйтем. *Илдең эше ир муйынында.* Әйтем.

**МУЙЫНДАМА** *и. иҫк.* Йөкләмә. *Муйындама ҡабул итеү.* ■ *[Билал:] Договорҙы ҡабул итергә, комсомолдарҙан үҙ өҫтәренә алған муйындамаларын үтәп сығыуҙы һорарға кәрәк.* М. Тажи.

**МУЙЫНСА** *и.* **1.** *махс.* Берәй ағзаның бер өлөшөнән икенсе өлөшөнә күскән тарыраҡ урыны. *Теш муйынсаһы. Инәлек муйынсаһы.*

**2.** *диал. кар.* **муйынсаҡ** 1.

**МУЙЫНСАҠ** *и.* **1.** Йорттағы эт-хайуандың муйынына таға торған бау. *Быҙау муйынсағы. Эт муйынсағы.* ■ *Ҡара, беҙҙең ҡашҡа быҙау, ҡара, ҡалай уйынсаҡ! Һикерә йөрөп уйнар ине, уңайһыҙлай муйынсаҡ.* Ғ. Амантай.

**2.** *диал.* Мунсаҡ.

**МУЙЫНСАҠЛАУ** *к.* Муйынсаҡ (1 мәғ.) һалыу. *Тимер мейес ҡыҙыу итеп яғылған. Ишек төбөндәге мөйөшкә муйынсаҡлап ҡуйылған быҙау менән һарыҡ бәрәстәре әҫегә әлһерәп, һуҙылып ятҡан.* С. Ҡудаш.

**МУЙЫРЫЛЫУ** *к. диал.* **1.** *төш. кар.* **муйырыу.**

**2.** *күсм.* Ныҡ хәлһеҙләнеү *Муйырылған нөгәрен [Юрматылар] ҡабат туплай алманы.* «Мәргән менән Маянһылыу». *Данлы көсөң муйырылғас, ҡара көсөңә ҡалдың* (Туй йырынан).

◆ **Муйырылып ҡарау** йөрәккә инерҙәй булып, өмөтләнеп, тилмереп ҡарау. *Хәлһеҙ хайуан, меҫкен, муйырылып, хужаһына боролоп ҡараған. Ауыр һулап, хужа ул хайуандың дегәнәкле ялын тараған.* Ҡ. Даян.

**МУЙЫРЫУ** *к. диал.* Умырыу. *Бүре аттың янбашынан муйыра тешләп алған.*

**МУЙЫУ** *к. диал.* Бойоғоу. *Муйып йөрөү.*

**МУҠСА** *и. кар.* **моҡсай.**

◆ **Көтөүсе муҡсаһы** *бот.* әүернә сәскәләләр ғаиләһенә ҡараған аҡ сәскәле, ваҡ ҡына өскөл ҡуҙаҡлы үлән. *Көтөүсе муҡсаһының һабағын ғына киптерәләр. Ул ҡан ағыуын туҡтата.* «Совет Башҡортостаны», 1966, 3 июль.

**МУҠСАЛЫ** *с.* Балаһын ҡорһаҡ аҫтында йөрөтә торған йәнлек йәки хайуан. *Муҡсалы бүре.*

**МУҠШЫ** [*рус.* мокша] *и.* Мордва халҡының ике этник төркөмөнөң береһе. *Муҡшы ауылы. Муҡшы ҡатыны. Муҡшы теле.*

**МУЛ** [1] *с.* **1.** Артығы менән, буйтым етерлек; күп, ҙур. *Мул күстәнәс. // Мул алыу. Мул ашау.* ■ *Фәхри мул киҫәк әләктерҙе. Белә ул йәш йылҡы итенең тәмен.* Б. Бикбай. *Арба төбөнә бесәнде мулыраҡ һалып ал.* М. Тажи.

**2.** Бөтә нәмә етеш, иркен; бай. *Мул тормош. // Мул йәшәү.* ■ *Колхозсының хәҙер көнкүреше мул.*

**3.** Иркен күңелле; йомарт. *Мул кеше. // Мул тотоноу.*

**4.** Кәүҙәгә иркен; киң. *Мул күлдәк.*

● *Аҙыҡ мул ерҙә ауырыу булмаҫ.* Әйтем. *Бер тиренән тун да тек, мул да тек.* Әйтем. *Кемдең эше күп шуның ҡулы мул.* Әйтем.

**МУЛ** [2] [*рус.* ⟨ *лат.*] *и. кар.* **ҡасыр.**

**МУЛА** *и.* Өҫтөнә таштан көмбәҙ ҡуйған ҡәбер; кәшәнә. *Үлгән йәрем мулаһын алтынлы өйгә бирмәҫмен.* «Буҙйегет».

**МУЛАЙТЫУ** *к.* **1.** Күбәйтеү, ишәйтеү. *Байлыкты мулайтыу.* ■ *Һуғыш йылдарында байтаҡ ҡына һалдаттарҙы үҙенә юҡ хаҡҡа эшләтеп [бай] кеҫәһен ҡалынайтты, малын мулайтты.* Б. Хәсән.

**2.** Киң итеү, иркенәйтеү. *Күлдәкте мулайтыу.*

**МУЛАЙЫУ** *к.* **1.** Күбәйеү, ишәйеү. *Хәҙер бына байлыҡ мулайҙы.* Һ. Дәүләтшина.

**2.** Киңәйеү, иркенәйеү. *Күлдәгем мулайҙы.*

**МУЛА́Т** [*рус.* ⟨ *исп.*] *и.* Аҡ тәнле менән ҡара тәнленең ҡушылыуынан тыуған бала. // *Мулат ҡыҙ.*

**МУЛДӘКӘ** *и.* Революцияға ҡәҙәр ҡаҙаҡтарҙа уҡытып йөрөгән кеше.

**МУЛИНӘ** [*рус.* мулине ⟨ *фр.*] *и.* Төрлө төҫтәге сигә торған еп; кизе. *Мулинә менән сигеү.*

**МУЛЛА** [*ғәр.*] *и.* **1.** Мосолман диненә хеҙмәт иткән, дини уҡымышлы булған кеше. *Ауыл муллаһы. Мәхәллә (йәки мәсет) муллаһы. Указлы мулла.* ■ *Мулла булғас, өҫтөңә төшкән бурысты үтәмәй булмай. Мужиктың балаһы тыуһа — исем ҡушырға кәрәк, ул өйләнә — никах уҡырға кәрәк, ул үлә — йыназалап ерләргә кәрәк.* Ғ. Ғүмәр.

**2.** *һөйл. күсм.* Белемле, уҡымышлы кеше.

♦ **Мулла бесәйе** тыштан бик тәртипле, ыҫпай булып, эстән яуыз булған кешене әйтәләр. **Ни аллаға, ни муллаға** *ҡар.* **алла.**

**МУЛЛАБАШ** *и. диал.* Бәпембә.

**МУЛЛАЛЫҠ** *и.* Мулла вазифаһы. *Муллалыҡ итеү. Муллалыҡты ташлау.* ■ *Йәрмәкиҙең муллалыҡта тормағы мәгкүл түгел, нишләйһең, шунан бүтән юл беҙҙе һис мәкбүл түгел.* Ш. Бабич.

**МУЛЛА-МОНТАҒАЙ** *и. йыйн.* Дин әһелдәре. *Мулла-монтағайҙар аҡыл һатҡан: «Һеҙгә ожмах теге донъяла!»* С. Кулибай.

**МУЛЛАТАЙ** *и. иҫк.* Өлкән йәштәге мулла.

**МУЛЛАУ** *ҡ. һөйл.* Мул[1] (1 мәғ.) тотоноу, мул биреү; мул ҡыланыу.

**МУЛЛЫҠ** *и.* Етешлек, байлыҡ. *Муллыҡта йәшәү.*

**МУЛЫҒЫУ** (мулыҡ*ғ*) *ҡ.* Күп булып ҡулға ингән нәмәгә кинәнеү. *Аҡсаға мулығыу. Икмәккә мулығыу. Сәй-шәкәргә мулығыу.*

**МУЛЫҠТЫРЫУ** *ҡ.* Нимәгәлер кинәндереү. *Утынға мулыҡтырыу.*

**МУЛЬТИПЛИКА́ТОР** [*рус.* ⟨ *лат.*] *и.* **1.** Парогидравлик престарға ҙур баҫым менән һыу ҡыуа торған ҡулайлама.

**2.** *фото, кино.* Бер үк нәмәне бер юлы күп итеп төшөрә торған күп объективлы фотографик камера, шулай уҡ копияларҙы ишәйтә торған прибор.

**3.** Мультипликация буйынса белгес.

**МУЛЬТИПЛИКАЦИОН** [*рус.* мультипликационный] *с.* Мультипликацияға мөнәсәбәтле. *Мультипликацион фильм.*

**МУЛЬТИПЛИКА́ЦИЯ** [*рус.* ⟨ *лат.*] *и. кино* **1.** Һүрәттәрҙең, ҡурсаҡтарҙың айырым хәрәкәттәренең киноға төшөрөлөшө һәм шул ысул менән эшләнгән фильм.

**2.** Шул кинофильмды төшөрөү эше.

**МУ́МИЯ** [*ғәр.*] *и.* **1.** Бәлзәмләү юлы менән серетмәй киптереп һаҡлаған мәйет. *Боронғо Египетта фирғәүендәрҙең мәйеттәрен серетмәҫ өсөн нефть ҡушып бәлзәмләгәндәр. Уларҙың мумиялары хәҙерге көнгә тиклем тарҡалмай һаҡланып ҡалған.* Д. Бураҡаев.

**2.** *һөйл. кәмһ.* Үтә ябыҡ, кипкән, мәйеткә оҡшап торған кешегә ҡарата әйтелә.

**МУМИЯ́** [*ғәр.*] *и.* Ҡая һәм тау-таш ярыҡтарынан һарҡып сыҡҡан ыҫмала һымаҡ тәбиғи матдә (медицинала һынған һөйәкте уңалтыу, үпкә һәм тын юлдарын һ. б. дауалау өсөн ҡулланыла); тау майы. *Мумияны кеше ике мең йылдан артыҡ белә, шул саҡтан бирле мумия медицинала ҡулланыла.* «Совет Башҡортостаны», 1965, 31 март.

♦ **Мумия үләне** ҡалын япраҡлы, һабаҡ осонда ғына торған ҡыҙыл сәскәле үлән.

**МУ, му-у-у** *оҡш.* Һыйыр баҡырған тауышты белдергән һүҙ. *Му-у-у итеү.* ■ *Һайрай сәпсектәр, урамда һыйырҙар мөңрәй му-у-у, тип һыйыр менән быҙауҙары йөрөй.* Ш. Бабич.

**МУНАҠ** *с.* Мунап ташланған; мунаулы (ағасҡа ҡарата).

**МУНАЛЫУ** *ҡ. төш. ҡар.* **мунау.** *Муналған ағас.*

**МУНАУ** *ҡ.* Әрсеп юныу, өҫтән һыҙырып юныу. *Ағасты мунау. Һөйәктең итен мунау.*

**МУНДА** *и.* Аттың ҡулбашы өҫтөндәге ҡалҡыу ер. *Ул [Төлкөсура] һуҡҡан бүреһен атының мундаһы аша һалды.* Н. Мусин. *Иртән дә тороп ҡараһам, аралап йөрөп байҡаһам, мундаһы бейек күк ат юҡ.* «Аҡһаҡ ҡола».

**МУНДАЛЫ** *с.* Мундаһы бейек. *Мундалы ат.*

**МУНДИ́Р** [*рус.* ⟨ *нем.*] *и.* Хәрбиҙәр йәки айырым рәсми хеҙмәткәрҙәр кейә торған формалы кейем. *Генерал мундиры. Тимер юл эшселәре мундиры. Элемтә хеҙмәткәрҙәре мундиры.*

**МУНДИРЛЫ** *с.* Мундир кейгән. *Мундирлы кеше.*

**МУНДШТУ́К** [*рус.* ⟨ *нем.*] *и. ҡар.* **мөштөк.**

**МУНИЦИПАЛИЗА́ЦИЯ** [*рус.* ⟨ *фр.*] *и.* Айырым кешеләр ҡулындағы ерҙең, мөлкәттең хөкүмәт тарафынан урындағы үҙидара ҡарамағына бирелеүе.

**МУНИЦИПАЛИТЕ́Т** [*рус.* ⟨ *нем.*] *и.* Буржуаз илдәрҙә урындағы үҙидара һәм шул идара урынлашҡан бина.

**МУНИЦИПАЛЛӘШТЕРЕЛЕҮ** *ҡ. төш. ҡар.* **муниципалләштереү.**

**МУНИЦИПАЛЛӘШТЕРЕҮ** *ҡ.* Айырым кешеләр ҡулындағы ерҙе, мөлкәтте урындағы үҙидара ҡарамағына күсереү.

**МУНИЦИПАЛЬ** [*рус.* муниципальный] *с.* Муниципалитетҡа мөнәсәбәтле. *Муниципаль больница. Муниципаль һайлауҙар.*

**МУНСА** *и.* Парланып йәки сабынып йыуыныу өсөн эшләнгән махсус бина. *Ауыл мунсаһы. Ҡала мунсаһы. Мунса ташы. Мунса әләүкәһе. Мунса ягыу. Мунса өлгөртөү.* ■ *Сәлимә мунсаны таңдан тороп яғып, томалап ҡуйҙы.* З. Биишева. *[Сөмбөл Заһитҡа:] Һин өшөп ҡайтһаң тип, мунса ла яҡҡайныҡ. Әсәй мунса уҙҙырып йөрөй, йыуыныр сығырһың.* Ф. Әсәнов. **Аҡ мунса** мөрйәле мейес ултыртылған мунса. **Кейәү мунсаһы** ҡыҙ менән егет ҡауышҡас яғылған тәүге мунса. **Коммуналь мунса** күмәк халыҡ бер юлы йыуына торған ҙур мунса; күмәк мунса. *Ана егерме кешелек коммуналь мунса. Сабынырға яратһаң — пар бүлмәһе, ваннала йыуыныу оҡшай икән — ванна бүлмәләренә рәхим ит.* «Совет Башҡортостаны», 1976, 2 июнь. **Ҡара мунса** мөрйәһеҙ мейесле мунса. *Һылыубикә әбейҙәрҙең түбәһенә алабута үҫеп, көлгә күмелерҙәй булып ултырған ҡара мунсаһы аҙна ун көн буйы шартлап торҙо, уға нисек ут ҡапмаған-*

*дыр.* Р. Низамов. **Мунса инеү** мунсала йыуыныу.

♦ **Әбей, мунса бир әле** бала-саға уйыны (өйҙәң һәр мөйөшөнә кеше баҫа, уртала берәү ҡала; ул мөйөштә торғандарҙан: «Әбей, мунса бир әле»,— тип һорай, тегеләр: «Буш түгел», тиҙәр, үҙҙәре урталағы кеше күрмәгәндә генә алмашыналар); мөйөш.

**МУНСАҠ** *и.* Төрлө мәрйен теҙеп муйынға таға торған биҙәүес. *[Ҡыҙ:] Мин фатиха итеп мунсағымды һиңә бирәм, таҡһын Көнһылыу.* Й. Солтанов. / Шул мунсаҡҡа теҙелә торған мәрйендең береһе. *Ебе өҙөлөп, тауыҡтың мунсаҡтары сәселде лә китте, ти* (Әкиәттән).

♦ **Ҡуш мунсаҡтай** *йәки* **ҡуш мунсаҡ кеүек** бер-береһенән һис айырылмаған кеше йәки малға ҡарата әйтелә. *Урмансы ниҙәр күрһә, ат башына ла шул төшә. Улар ҡуш мунсаҡ кеүек.* Т. Килмөхәмәтов.

**МУНСАЛА** *и. диал.* **1.** *ҡар.* **йүкә** 2.

**2.** *ҡар.* **йыуғыс** 1. *Мунсала менән йыуыныу.*

**МУНСАСЫ** *и.* Мунсала эшләгән кеше. *Мунсасы булып эшләү.* ■ *Стенала почет таҡтаһы.. Таныш әбей — мунсасының тора фотоһы.* Ш. Бикҡол.

**МУРҘА** *и.* Ауыҙын тар итеп талдан үргән балыҡ тотоу ҡоралы. *Мурҙа үреү. Мурҙа һалыу.* ■ *Фәйзулла Күҙйылғалағы мурҙаларын ҡарап, эреле-ваҡлы биш-алты сабаҡ алып ҡайтты.* Ф. Иҫәнғолов. **Мурҙа анаһы** мурҙаның тышҡы өлөшө. **Мурҙа балаһы** мурҙаның ауыҙланып, эскә инеп торған өлөшө; йәлдәү.

**МУРҘАЙ** *и.* Һыйырҙың ыҫлаған елен тиреһенән ҡылыслап яһаған һауыт; күҙәгә.

**МУРҘАЛЫҠ** *с.* Мурҙа үрергә яраҡлы. *Мурҙалыҡ тал.*

**МУРТ** *с.* **1.** Еңел генә һыныусан, һынып тороусан. *Мурт ағас. Мурт тал.* ■ *Үҙе була мурт ҡына, ерек ул шартлап һына.* Ә. Вәли. / *диал.* Өҙөлөп тороусан. *Мурт еп.*

**2.** *күсм.* Ихтыярһыҙ, йомшаҡ. *Мурт кеше. Мурт булыу.*

**МУРТАЙ** *и.* Ыҫлаған мал тиреһенән тар ауыҙлы, ялпаҡ итеп тегелгән бәләкәй һауыт. *Һаба теккәндә ҡалған ҡыրҡындыларҙан муртай, турһыҡ тегәләр.* М. Ғөбәйҙуллин. *Киң арҡанан ҡанъяғаһына сәрмәләрен, муртайҙарын таҡҡан, уҡ-һаҙағы менән әҙернә янын биленә аҫҡан бер һыбайлы һунарға китеп бара.* Ш. Шәһәр.

**МУРТАЙТЫУ** *к.* Муртҡа әйләндереү, мурт итеү. *Ҡаты һыу сәсте муртайта.*

**МУРТАЙЫУ** *к.* Һыу һеңеп сереү. *Йорт алдында муртайып бөткән уҫаҡтар, кәкре-бөкрө ботаҡлы ҡарамалар ята.* С. Агиш.

**МУРТАСА** *и.* Бәләкәй муртай.

**МУРТЛАНДЫРЫУ** *к.* Мурт (1 мәғ.) итеү, муртҡа әйләндереү.

**МУРТЛАНЫУ** *к.* Муртҡа әйләндереү, мурт булыу. *Муртланған ағас.* ■ *Ҡаты һыу сәстең майын ҡорота, сәстең муртланыуына сәбәп була.*

**МУРТЫҒЫУ** (муртыҡ*≠*) *к. диал.* **1.** Муртланыу. *Муртыҡҡан ағас.*

**2.** Бурһыу. *Муртыҡҡан ит.*

**МУРТЫҠ** *с.* Оҙаҡ ятып муртайған. *[Солтангәле] Күп йылдар ятып серегән муртыҡ ҡайын ботаҡтарын бер урынға, ныҡыраҡтарын икенсе яҡҡа айырып һалды.* Я. Хамматов.

**МУСИМ** [*ғәр.*] *и.* Васыят итеүсе.

● *Һәр мусимға бер фирғәүен.* Әйтем.

**МУСКА́Т** [*рус.*] *и. ҡар.* **мөшкәт** [1].

**МУ́СКУЛ** [*рус.* 〈 *лат.*] *и.* Кеше һәм йәнлек тәненең тартылырға һәләтле булып, бөтә организмының иң мөһим физиологик функцияларын тәьмин иткән туҡымаһы; көс ит.

**МУСКУЛАТУ́РА** [*рус.*] *и.* Тәндәге бөтә булған мускул. *Мускулатураны ныҡытыу.*

**МУСЛИ́Н** [*рус.* 〈 *фр.*] *и.* Еңел йоҡа туҡыма. *Ебәк муслин. Йөн муслин.* // *Муслин күлдәк. Муслин яулыҡ.*

**МУССО́Н** [*рус.* 〈 *фр.*] *и.* Йәй — диңгеҙҙән, ҡыш ҡоронан өргән ел. *Йәйге муссон елдәре.*

**МУТ** *с.* **1.** Аҫтыртын ғына, хәйлә менән эш иткән; хәйләкәр. *Мут кеше. Мут ҡараш. Мут булыу.* // *Мут йылмайыу.* ■ *[Көтөүсе:] Беҙҙең председатель дә мут кеше, кемгә нисек яуап бирергә өйрәнеп бөткән.* С. Агиш.

**2.** Шаян, шуҡ. *Егет булһа, мут булһын, ике күҙе ут булһын.* (Халыҡ йырынан).

● *Ерек утын мурт була, еңгә ҡатын мут була.* Әйтем.

**МУТАЦИОН** [*рус.* мутационный] *с.* Мутацияға бәйләнешле, мутацияға мөнәсәбәтле. *Мутацион үҙгәреш. Мутацион осор.*

**МУТА́ЦИЯ** [*рус.* 〈 *лат.*] *и.* **1.** Нимәнеңдер ҡапыл барлыҡҡа килгән нәҫелдән үҙгәреше.

**2.** *биол.* Организмда ҡапыл хасил булған нәҫелдән килгән үҙгәреше.

**3.** Бәлиғ булыу осоронда үҫмер малайҙар тауышының ҡапыл үҙгәреүе.

**МУТЛАНЫУ** *к.* Мутҡа әйләнеү, мут булыу, мутлыҡ итеү. *Ҙур күҙле Андрей мутланып күҙ ҡыҫты.* Ә. Бикчәнтәев.

**МУТЛАШЫУ** *к.* Мутлыҡ эшләү, мутлыҡ итеү. *Еҙнәкәйем, ҡыҙ бирәбеҙ, бүләк бир ҙә алып кер. Бүләк бирмәй мутлашһаң, аръяғыңды үҙең бел* (Туй таҡмағынан).

**МУТЛЫҠ** *и.* **1.** Мут кешегә хас сифат. *Тол ҡатын алһаң, уның мутлығы үҙенән ауыр булыр.* З. Биишева.

**2.** Хәйләгә, алдыҡҡа йәки шаянлыҡҡа, шуҡлыҡҡа ҡоролған эш, хәл. *Мутлыҡ ҡылыу.* ■ *Ревизор килеп, Диаровтың эшен тикшерә башланы, бөтә мутлыҡтарын асып һалды.* Ә. Әлибаев.

**МУТЫ** [*рус.* мыт] *и. диал. ҡар.* **маңҡа** 2.

**МУФЛО́Н** [*рус.* 〈 *фр.*] *и.* Урта диңгеҙ утрауҙарында йәшәгән ҡырағай һарыҡ.

**МУ́ФТА** [*рус.* 〈 *нем.*] *и.* Ҡулды тығып йөрөтөү өсөн ике яҡтан асыҡ итеп тегелгән мех нәмә.

**МУШКЕ́Т** [*рус.* 〈 *фр.*] *и.* Эре калибрлы боронғо атыу ҡоралы (мылтыҡ төрө).

**МУШКЕТЁР** [*рус.* 〈 *фр.*] *и.* Мушкет менән ҡоралланған һалдат.

**МУШМУЛЛА** *и. ҡар.* **мүшмел.**

**МУШТАР** [*ғәр.*] (*баш хәреф менән*) *и. иҫк. астр.* Ҡояш системаһында Ҡояштан бишенсе торған планета; Юпитер.

**МУШТРА́** [*рус.* 〈 *пол.*] *и.* Аңһыҙ, механик рәүештә өйрәтеүгә нигеҙләнгән тәрбиә ысулы. *Хәрби муштра.*

**МҮК** *и.* Кейеҙләнеп ергә түшәлеп үҫә торған тамырһыҙ һәм сәскәһеҙ спораЛы үҫемлек. *Болан мүге. Ҡарағай мүге. Таш мүге. Һаҙ мүге. Мүк йолҡоу.* ■ *Түбә өҫтөндә мүк ашап торған ҡоралай .. башын артҡараҡ ташлап һикереп китте.* М. Тажи. *Хәрәкәтһеҙ ята торғас кул һайыҡҡан, яҡты йөҙөн мүктәр ҡаплаған.* Ғ. Әмири. / Бураның бүрәнә араһына һалыу өсөн ҡулланылған киптерелгән шул үҫемлек. *Мүк ҡалағы. Мүккә күтәреү. Мүк тығыу.* ■ *Әбей әнәне бүрәнә мүгенә ҡаҙап ҡуя* (Әкиәттән).

**МҮКЛӘК** *с. диал. кар.* **туҡал.** *Мүкләк һыйыр.*

**МҮКЛӘНЕҮ** *ҡ.* **1.** *төш. кар.* **мүкләү.** *Мүкләнгән бура.*

**2.** *күсм.* Тормоштан ситләшеп, дәрт-теләктән яҙып, бәҫләнеү; һамһыу. *Беҙ йылдың йыл буйына ошо урман араһынан сыға алмай мүкләнеп ята торғайныҡ.* М. Тажи.

● *Йөрөгән таш шымарыр, ятҡан таш мүкләнер.* Әйтем.

**МҮКЛӘТЕҮ** *ҡ. йөкм. кар.* **мүкләү.** *Бураны мүкләтеү.*

**МҮКЛӘҮ** *ҡ.* Бураның бүрәнә араһын мүк менән һыҙлыҡлау. *Мүкләп һалыу. Мүкләп күтәреү.* ■ *Өрмәһен тип араһынан һалҡын елдәр, ниргәләрҙе ҡалын итеп мүкләнек беҙ.* С. Ҡудаш.

**МҮКТӘК** *и.* Лютик һымаҡтар ғаиләһенә ҡараған киртләс япраҡлы, асыҡ күк таҡыя сәскәле үлән (һыуыҡ үткәндә япрағына ураналар).

**МҮКТӘРГЕ** *и. зоол.* Ыласын һымаҡтар ғаиләһенә ҡараған осло булып бөткән киң оҙон ҡанатлы, тар оҙон ҡойроҡло, һырты һарғылт ерән йәки аҡһыл буҙ, ҡанат осо ҡара, ҡойроҡ төбө аҡ төҫтәге сысҡан типкес ҡош. *Һауаларҙа оса мүктәрге, ҡанат осҡайҙары селтәрле* (Халыҡ йырынан).

**МҮКТӘҮ** *и. диал.* Мүкләнеп ятҡан һаҙмат ер; керәкә. *Мүктәү үләне. // Мүктәү ер.*

**МҮКШЕҮ** *ҡ. диал.* Һутһыҙланып, йомшарыу; һулыу. *Мүкшегән картуф. Йылыға кишер мүкшей.*

**МҮКӘЙЕҮ** *ҡ. диал.* Сүкәйеү. *Мүкәйеп ултырыу.*

**МҮКӘЙЛӘҮ** *ҡ. диал.* Имгәкләү. *Бала мүкәйләп йөрөй.*

**МҮЛ** *и. диал.* Сүмесбаш.

**МҮЛСЕ** *и. диал. кар.* **ҡыуғынсы**[2].

**МҮСКӘ** [*рус.* моська] *и. диал.* Сәүек.

**МҮШКӘР** *и. диал. кар.* **балға** 1. *Сөйҙө мүшкәр менән ҡағыу.*

**МҮШМЕЛ** [*төрк.*] *и.* **1.** Татлы емеше грушаға оҡшап торған көньяҡ ҡыуағы йәки ваҡ ағас. *Мүшмел сәскәһе.*

**2.** Шул ағастың емеше. *Мүшмел вареньеһы.*

**МЫҒЫРЛАҠ** *с.* Мыжып, мығыр-мығыр һөйләнеп йөрөүсән. *Мығырлаҡ кеше. Мығырлаҡ булыу.*

**МЫҒЫРЛАНЫУ** *ҡ.* Мығыр-мығыр һөйләнеү. *Шәүәли ҡунаҡтар алдында аҡланғандай итеп, ауыҙ эсенән нимәлер мығырланды, ләкин эргәһендәгеләр уның ни әйткәнен дә айыра алманы.* Б. Бикбай.

**МЫҒЫРЛАТЫУ** *ҡ.* Мығыр-мығыр һөйләндереү, мыжытыу. *Әбейҙе мығырлатыу.*

**МЫҒЫРЛАУ** *ҡ.* **1.** Мығыр-мығыр һөйләү, мығыр-мығыр килеү. *Әҙәмдәрҙе аулар өсөн [суфый] ауҙы көйләр, морон үтә мығырлап һүҙен һөйләр* (Мөнәжәттән).

**2.** Мыжып, ризаһыҙланып, үҙ алдыңа мығыр-мығыр һөйләнеү. *Ҡотлояр байҙың .. бәйләнмәгән көнө юҡ. Тимеркәй уға күптән күнеккән, уның мығырлауы ябай һүҙгә әйләнеп киткән.* Д. Юлтый.

● *Ҡабыҡ арба күп шығырлар, ҡарт ҡәйнә күп мығырлар.* Әйтем.

**МЫҒЫР-МЫҒЫР** *оҡш.* Ауыҙ эсенән ишетелер-ишетелмәҫ һөйләгән тауышты белдергән һүҙ. *Мығыр-мығыр һөйләнеү.* ■ *Әбей йоҡо аралаш көлөп ебәрҙе лә уяныпкитте. Шунан мығыр-мығыр уҡынып, икенсе яғына әйләнеп ятты.* М. Тажи.

**МЫҘЫҠА** *с. диал.* Ығыш, мыштыр. *Мыҙыҡа кеше. Мыҙыҡа булыу.*

**МЫҘЫЛЫУ** *ҡ. диал.* **1.** Мыштырлау.— *Егеттәр, мыҙылмағыҙ, һарайҙың тәҙрәһен бөгөн уҡ ҡуйып бөтөгөҙ.* Н. Мусин.

**2.** *кар.* **ирәйеү** 2. *Мыҙылып ултырыу.*

**МЫЖ** *с.* Ҡайнашып торған күп һанлы. *Халыҡ мыж килә.* ■ *[Әбей:] Ул жуликтар күҙеңә алма булып күренер, эсе мыж ҡорт булыр.* С. Агиш. *Лотфи Ғәҙел төҫлө ни етте шәкерттәр беҙҙә мыж.* Ш. Бабич. *Бөжәктәр зәгферән һарыһына буялған ҡамыл төптәрендә мыж килә.* И. Ғиззәтуллин.

**МЫЖБЫР** *с. диал.* Быҙмыр, мыштыр. *Мыжбыр кеше. Мыжбыр булыу.*

**МЫЖҒЫЛДАУ** *ҡ. диал.* Мыжғыу. *Быға тиклем тын ғына торған Һабаш ауылы ҡырмыҫҡа иләүенә оҡшап, мыжғылдай башланы.* А. Карнай.

**МЫЖҒЫРЛАУ** *ҡ.* Күмәк булып ҡайнашыу; мыж килеү, мыжғыу. *Ҡырмыҫҡа иләүе кеүек мыжғырлау.*

**МЫЖҒЫТЫУ** *ҡ.* Ҡайнашырға мәжбүр итеү; мыж килтереү. *Ҡырмыҫҡаны мыжғытыу.*

**МЫЖҒЫУ** *ҡ.* Күмәк булып, бер урында ҡайнашыу; мыж килеү. *Йөҙәрләгән, меңәрләгән үрмәксе мыжғып эшкә керешкән. Шул ике арала йөҙ аршын ебәкте һуғып та өлгөрткән, ти* (Әкиәттән).

● *Тымыҡ һыуҙа ҡорт мыжғый.* Әйтем.

**МЫЖЛАУ** *ҡ. кар.* **мыжғыу.**

**МЫЖРАУ** *ҡ. диал.* Мыжғыу.

**МЫЖЫ** *и. диал.* Рахит ауырыулы кеше.

**МЫЖЫҠ** *с.* **1.** Ваҡ, ризаһыҙлыҡ, ҡәнәғәтһеҙлек менән һөйләнеүсән. *Шәхми бай ауылдың иң һаран кешеләренән береһе булыу өҫтөнә бик мыжыҡ, юҡ-барҙы соҡорға яллап ҡуйған кеүек.* Т. Йәнәби.

**2.** Ниҙелер сәбәп итеп, кәйефһеҙләнеп, илап барған; көйһөҙ. *Мыжыҡ бала.* ■ *Ун йәшенә тиклем һаман мыжыҡ, һаман илаҡ булды Әпеше.* Д. Юлтый.

**3.** *диал. күсм. кар.* **быҫҡаҡ**[1]. *Мыжыҡ ямғыр.*

**МЫЖЫҠЛАНЫУ** *ҡ.* **1.** Һөйләнсеккә әйләнеү, мыжыҡ, ваҡсыл булыу. *[Гөлйөҙөм:] Өйҙә эшһеҙ-*

*лектән эсе бошоп, катын-ҡыҙ эшенә ҡыҫылып, мыжыкланып ятмаһын.* С. Ҡудаш.

**2.** Илаҡҡа әйләнеү, мыжыҡ булыу; көйһөҙләнеү. *Бала ауырып мыжыкланып китте.*

**МЫЖЫЛДАУ** *ҡ. ҡар.* **мыжыу.** *Мыжылдап йөрөү.*

**МЫЖЫЛТЫҠ** *и. диал.* Мыштыр, ығыш. *Мыжылтыкка әйләнеү.*

**МЫЖЫРЫҠ** *с. диал.* Мыштыр, быҙмыр. *Мыжырык кеше.*

**МЫЖЫТЫУ** *ҡ.* **1.** Ризаһыҙлыҡ уятып һөйләндертеү. *Кешене мыжытыу.* ■ *Ул [Ғиндулла бабайҙы] мыжытмаҫ өсөн бөтә нәмәне урынына еткереп эшләргә тырыша.* З. Хисмәтуллин.

**2.** Көйһөҙләндереп илатыу. *Баланы мыжытыу.*

**МЫЖЫУ** *ҡ.* **1.** Юҡ-барҙан ғәйеп табып, ризаһыҙланып һөйләнеү. *Юк, атайымдың бер вакытта ла каты өндәшеп, әрләгәне булманы. Әсәйем мыжып барғанда ла: «Етәр, етәр, әсәһе укыған балаларҙы улай ялкытмайык»,— ти торгайны.* К. Кинйәбулатова.

**2.** Ниҙелер сәбәп итеп, кәйефһеҙләнеү; көйһөҙләнеү. *Мыжып илау.* ■ *Имсәк ташлаған кыҙ төнө буйы мыжып сыкты. Билдәле инде — имергә һорай.* Ғ. Ибраһимов.

**МЫЗЛАЙ** *и. диал.* Мысай. *Мызлай орлоғо. Мызлай үҫкән ер.*

**МЫЗЛАТЫУ** *ҡ.* Осконланған һымаҡ итеп ялтыратыу (күҙҙе). *Күҙҙе мызлатыу.*

**МЫЗЛАУ** *ҡ. ҡар.* **быҙлау.** *Кыҙҙың мызлаған күҙҙәре Сынтимер яғында.* Ш. Янбаев.

**МЫЗЫЙ** *и. диал.* Һуҡыр шәм. *Мызый яндырыу.*

**МЫЙҠЫЛДАҠ** *с.* Һимеҙ, йомшаҡ булып ҡыйшанлап торған (тәнгә ҡарата).

**МЫЙҠЫЛДАУ** *ҡ.* Һимеҙ, йомшаҡ булғанлыҡтан мыйҡ-мыйҡ килеп тороу (тәнгә ҡарата).

**МЫЙҠЫЛДАШЫУ** *ҡ. урт. ҡар.* **мыйҡылдау.**

**МЫЙМЫЛДАҠ** *с.* Һимеҙ, йомшаҡ булып һелкенеп торған (тәнгә ҡарата). *[Мулла:] Собханалла!.. Ах ошо мыймылдакты хоҙайым миңә насип итһәсе!* Б. Бикбай.

**МЫЙМЫЛДАТЫУ** *ҡ.* Ҡыйыш-мыйыш иттереү, ҡыйыш-мыйыш килтереү. *Ауыҙҙы мыймылдатыу.*

**МЫЙМЫЛДАУ** *ҡ.* **1.** Һимеҙ, йомшаҡ булып һелкенеү. *Баттал Ғәлимәнең тулы беләктәренә, мыймылдап торған тулы күкрәктәренә яланып карай.* А. Таһиров.

**2.** Ҡыйыш-мыйыш килеп ҡыбырлау. *Мыймылдап торған йәмшек ауыҙ.*

**МЫЙМЫЛДАШЫУ** *ҡ. урт. ҡар.* **мыймылдау.** *Ғәрифә лә һылыу һыуҙан килә мыймылдашып ике бөйөрө* (Халыҡ йырынан).

**МЫЙТ-МЫЙТ** *оҡш.* Ҡыйыш-мыйыш төрлө яҡҡа йөрөгән хәрәкәтте белдергән һүҙ. *Мыйтмыйт итеү. Мыйт-мыйт килеү.*

**МЫЙТЫЛДАТЫУ** *ҡ.* Мыйт-мыйт иттереү, мыйт-мыйт килтереү. *Ауыҙҙы мыйтылдатыу.*

**МЫЙТЫЛДАУ** *ҡ.* Ҡыйыш-мыйыш төрлө яҡҡа йөрөү. *Ауыҙы мыйтылдап тора.*

**МЫЙТЫЛДАШЫУ** *ҡ. урт. ҡар.* **мыйтылдау.**

**МЫЙЫҠ** *и.* **1.** Ирендең өҫкө яғына үҫкән төк (ирҙәрҙә). *Кара мыйык. Мыйык сығыу. Мыйык үҫтереү. Мыйыкты бороу. Мыйыкты кырыу. Мыйыкты һыйпау.* ■ *Һыҙылып үҫкән кара мыйык, нисек үберһең кыйып* (Халыҡ йырынан). **Көр мыйыҡ** *һөйл.* бик ҡуйы, ҡалын мыйыҡ.

**2.** Йәнлектәрҙең, хайуандарҙың өҫкө ирене тирәһендә үҫкән, һиҙенеү ағзаһы булып хеҙмәт иткән шырт йөндәре. *Бесәй мыйығы.* ■ *Куян һирәк кенә мыйығын кыймылдатып һауаны еҫкәргә өлгөрмәй ҙә калды, .. куркып ситкә һикерҙе.* Я. Хамматов.

**3.** Быуынтыҡ аяҡлыларҙың ауыҙ, мороно тирәһендә оҙон үҫенде һымаҡ үҫкән еҫ тойоу, һиҙенеү ағзаһы. *Кыҫала мыйығы. Таракан мыйығы.*

**4.** Ҡайһы бер үҫемлектәрҙең һабағы осондағы уралып йәбешә торған үҫенде.

**5.** *ҡар.* **еле** 3.

**6.** *күсм.* Сайыр ағыҙыу өсөн ҡарағай олонона ҡыя һыҙылған юлаҡ. *Мыйык тартыу.* ■ *Мыйыкты кәрәгенән артык тәрән йәки оҙон итеп сыйһаң, ағаска зыян килә.* З. Ураҡсин.

♦ **Мыйыҡ сыуалыу** (*йәки* **сейәлеү**) йән көйөү, асыу килеү. *Бисәһенең Буранбайға бик ышканлауын күреп, Тимерғазының мыйығы сейәлә башлай* (Хикәйәттән). **Мыйыҡ аҫтынан көлөү** (*йәки* **йылмайыу**) аҫтыртын көлөү.

**МЫЙЫҠЛАНЫУ** *ҡ.* Мыйыҡ (4 мәғ.) сығыу. *Еләк мыйыкланды.*

**МЫЙЫҠЛЫ** *с.* Мыйығы (1—4 мәғ.) булған. *Мыйыклы кеше. Мыйыклы булыу.*

♦ **Мыйыҡлы балыҡ** сазандар ғаиләһенә ҡараған йылға балығы. **Мыйыҡлы ҡуңыҙ** ҡарышлауығы ағас менән туҡланған ҡуңыҙ.

**МЫЙЫҠСА** *и. ҡар.* **мыйыҡ** 1.

**МЫЙЫЛДАҠ** *и.* Мыйылдап һөйләшкән кеше.

**МЫЙЫЛДАУ** *ҡ.* Ишетелер-ишетелмәҫ кенә һөйләү. *Мыйылдап һөйләү.*

**МЫЙЫЛЫУ** *ҡ. диал.* Мылыйыу. *Мыйылып йөрөү.*

**МЫҠЛЫ** *с.* **1.** *ҡар.* **мыҡты** [1]. *Мыклы егет.*

**2.** *ҡар.* нығ 5. *[Мәсем:] Кылындар мыклы хеҙмәт инде беҙгә.* «Бабсаҡ менән Күсәк».

**МЫҠТАП** *р. диал. ҡар.* **нығлап.** *Мыктап эшләү.*

**МЫҠТЫ** [1] *с.* Эре һөйәкле, физик яҡтан көслө. *Мыкты булыу.* ■ *Алтмышты кыуа барһа ла, Әбделкәбир ағай имән кеүек мыкты ине.* Ф. Иҫәнғолов. *Һоло менән сыныктырылған мыкты аттар күсергә ирек бирмәй.* Ғ. Дәүләтшин.

**МЫҠТЫ** [2] *р. диал.* Бөтөнләйе менән, бөтөнләйгә. *Ул кешенең әйткәнен мыкты һанға һукмай.*

♦ **Мыҡты итеү** саманан аштырыу, арттырып ебәреү.

**МЫҠТЫШ** *с. һөйл.* Көслө генә, ныҡ ҡына. *Мыктыш егет. Мыктыш булыу.*

**МЫҠЫЙ** *с. һөйл.* Тотлоғоп, ыҡ-мыҡ итеп һөйләүсән. *Мыкый кеше. Мыкый булыу.*

**МЫҠЫЛДАУ** *ҡ.* Тотлоғоп һөйләү. *Мыкылдап һөйләү.*

**МЫҠЫРЛАУ** *ҡ.* Мыҡыр-мыҡыр итеп тауыш биреү. *Калын йөнлө ҙур һарык бәрәстәрен кыҙғанып .. мыкырлап әйәреп килә.* Ф. Иҫәнғолов.

**МЫҠЫР-МЫҠЫР** *оҡш.* **1.** Кәзә, һарыҡтың үҙ бәрәсенә йәки хужаһына өндәшкән йомшаҡ тауышын белдергән һүҙ. *Мыкыр-мыкыр итеү.*

**2.** Йәш баланың риза булып, рәхәтләнгән тауышы.— *Ана бит иламай ҙа кулда булғас, мыкыр-мыкыр итеп кинәнә.* Һ. Дәүләтшина.

**МЫЛТЫҠ** *и.* Ҡулға тотоп ата торған оҙон көбәкле ҡорал. *Куш көбәкле мылтык. Мылтык тауышы. Һунар мылтығы. Мылтык көбәге. Мылтык төйҙәһе. Мылтык атыу. Мылтыкты короу. Мылтыкты тоçкау.* ■ *Аçта калған Шафик мылтыктың сирткесен тартты. Көбәктән шартлап утлы төтөн бөркөлдө.* Я. Хамматов. **Йәтәсле мылтыҡ** төрлө алыçлыҡҡа ҡарап йәтешләнә торған ҡулайламалы мылтыҡ. **Ҡара мылтыҡ** көбәк осонан яһап ата торған боронғо мылтыҡ. **Ҡуян мылтығы** ваҡ дороп менән ата торған һыңар көбәкле бәләкәй мылтыҡ. **Ҡырлы мылтыҡ** көбәк эсе һыҙыҡлы мылтыҡ; винтовка. **Саҡма** (*йәки* **һыҙма) мылтыҡ** саҡма таш менән сағып ата торған боронғо мылтыҡ (16—19 быуаттарҙа булған). **Тағанлы мылтыҡ** тағанға ҡуйып ата торған боронғо ауыр саҡма мылтыҡ. **Тәтеле мылтыҡ** патронды биклəп сиртә торған ҡулайламалы хәҙерге мылтыҡ. **Һындырмалы мылтыҡ** көбәк төбөнән һындырып патрон тыға торған хәҙерге һунар мылтығы. **Һыу мылтығы** һыу эсендә ата торған уҡлы мылтыҡ.

♦ **Мылтыҡ көбәгенән үткәреү** атып үлтереү.

**МЫЛТЫҠЛАУ** *к. һөйл.* Кемделер мылтыҡ тоçҡаған килеш алып китеү.

**МЫЛЫЙЫУ** *к.* Йөҙгә əҙ генә көлөү, йылмайыу билдәһе сығарыу; көлөмһөрәү. *Мылыйып килеп сығыу.*

**МЫНАЯТ** *и. диал.* **1.** Көндәлек тормоштағы кәрәк-яраҡ нәмә. *Ал ошоно, берәр мынаятыңа ярар.*

**2.** Яҡшы нәмә, яҡшы хәл. *Беҙҙең былай ултырыу һирәк килә торған мынаят.* Т. Хәйбулин.

♦ **Мынаяттан сығыу** эшлектән сығыу. *Мазлумлыкта калып башкорт халкы мынаяттан сыгып иҙелде.* Х. Ғәбитов.

**МЫҢҒЫ: мыңғы булыу** *диал.* мас булыу (*кар.* **мас** [1]). *Каймакка мыңғы булыу.*

**МЫҢҒЫРЛАҠ** *с.* Мыңғыр-мыңғыр һөйләнгән; мыжыҡ. *Мыңғырлак кеше. Мыңғырлак булыу.*

**МЫҢҒЫРЛАУ** *к.* Мыңғыр-мыңғыр итеү, мыңғыр-мыңғыр килеү.

**МЫҢҒЫР-МЫҢҒЫР** *окш.* Ауыҙ эсенән аңлайышһыҙ итеп һөйләгәндә сыҡҡан тауышты белдергән һүҙ. *Мыңғыр-мыңғыр итеү. Мыңғыр-мыңғыр һөйләнеү.* ■ *Мыңғыр-мыңғыр килә йыуаш тауыш.* Ғ. Мәсғүт.

**МЫҢҠЫЛДАУ** *к. диал.* Һыңҡылдау. *Мыңкылдап илау.*

**МЫР** [1] [*рус.* мор] *и.* **1.** *кар.* **ҡырғын** 2.

**2.** Емеште, япраҡты һәм башҡа нәмәне ашап, тишеп йөрөгән төрлө ҡорт, ҡарышлауыҡ. *Мыр төшөү. Теш мыры. Эркет мыры.* ■ *Сәүкә, карға, буҙ сәпсек, мыр-маҙарҙы ашағас, һүҙ әйтергә оялған.* «Урал батыр».

♦ **Мыр һымаҡ булыу** иçәпһеҙ күп булыу. **Мыр ҡырғыр** ҡарғағанда әйтелә. *[Колош:] Мыр кырғырҙар, һеҙгә нисек кейем еткермәк кәрәк.* Б. Бикбай. **Һыу мыры** дымлы урында була торған ваҡ ҡына бер көнлөк себен.

**МЫР** [2] *окш.* Иркәләгән бесәй тауышын белдергән һүҙ. *Мыр итеү.* ■ *Иркә ала бесәй .. мыр итеп һылыу әбейҙең елкәһенә аркаһын терәп, рәхәтләнеп йокларға ятты.* Т. Йәнәби.

**МЫРАУЛАУ** *к.* Мырау-мырау итеп ҡысҡырыу. *Бесәй мыраулай.*

**МЫРАУЛАШЫУ** *к. урт. кар.* **мыраулау.**

**МЫРАУ-МЫРАУ** *окш.* Бесәй ҡысҡырған тауышты белдергән һүҙ. *Бесәй әйтә: «Мырау-мырау, юлсы торна, йөрөйһөң һин куркмайынса яңғыҙ кырҙа».* С. Ҡудаш.

**МЫРҘА** [*фарс.*] *и.* **1.** *тар.* Ҡайһы бер Көнсығыш халыҡтарында юғары ҡатлам кешеһенә бирелгән дәрәжә һәм шул дәрәжәне йөрөткән кеше. *14-се быуаттың икенсе яртыһынан алып Башкортостан вак хандар һәм мырҙалар кул аçтында кала.* Ә. Усманов.

**2.** Ҡайһы бер Көнсығыш халыҡтарында — юғары дәрәжәләге чиновникҡа йәки ғалимға бирелгән маҡтаулы исем.

**3.** Үҙеңдән кесе ир туған; ҡусты, эне. *Мин буçлығып илайым, мырҙаларым аптырашып киткән.* Ш. Янбаев. / Йәшкә кесе ир заты.— *Ялай мырҙа, һиңә әйтәм, кәләште ғүмергә бер генә алалар.* Т. Килмөхәмәтов.

♦ **Ир мырҙаһы** ир аçылы, ир уҙаманы.

**МЫРҘАЛАР** *и.* Бер башҡорт ырыуының исеме.

**МЫРҠ-МЫРҠ** *окш.* Сусҡа тауышын белдергән һүҙ. *Мырк-мырк итеү. Мырк-мырк килеү.*

**МЫРҠЫЛДАУ** *к.* Мырҡ-мырҡ итеү, мырҡ-мырҡ килеү. *Ярылырға торған суcкалар морондарын айкап мыркылдай.* Т. Йәнәби.

**МЫРҠЫҪ** *и.* Булдыҡһыҙ, йүнһеҙ. *Ялбыр юлбарыç тиреһен ябына бирегеҙ, йолкоштар. Олпат айыу тиреһен аунатa бирегеҙ, мыркыçтар.* «Заятүләк менән Һыуһылыу».

**МЫРҠЫШ** *с.* **1.** Йыуан, тулы кәүҙәле. *Мыркыш кеше. Мыркыш булыу.*

**2.** *кусм. кар.* **мырҡыç.**

**МЫРЛАУ** *к.* Мыр-мыр итеү. *Аркаһынан һыйпаһаң, бесәйем дә мырлай, ти.* К. Кинйәбулатова.

**МЫР-МЫР** *окш.* Бесәйҙең иркәләнгән, кинәнес тауышын белдергән һүҙ. *Мейес башында бесәй йоклай мыр-мыр килеп.* С. Ҡудаш.

**МЫРТ** *окш.* Ҡатҡыл нәмәне һындырғанда, ҡырҡҡанда сыҡҡан тауышты белдергән һүҙ. *Мырт итеп калыу.*

**МЫРТЛАТЫУ** *к.* Мырт иттереү. *Мыртлатып кыркыу.*

**МЫРТЛАУ** *к.* Мырт итеү. *Мыртлап һыныу.*

**МЫРТ-МЫРТ** *окш.* Ҡабат-ҡабат мырт иткән тауышты белдергән һүҙ. *Мырт-мырт килеү.* ■ *Арандағы кара кәзә мырт-мырт көйшәй* (Әкиәттән).

**МЫРТЫЙ** *и. диал. кар.* **мырҙа** 3. *[Закир:] Бәй, мыртый, һин нимә карап тораһың бында, .. ишек төбөндә.* З. Биишева.

**МЫРТЫЛДАТЫУ** *к.* Мырт-мырт иттереү. *Мыртылдатып кыяр ашау.* ■ *Карат күҙен акайтып ала ла, иçе китмәйенсә генә алдындағы йәшел бесәнде мыртылдатырға тотона.* Р. Солтангәрәев.

**МЫРТЫЛДАУ** *к.* Мырт-мырт итеү.

**МЫРТЫШ** *с. диал.* Ныҡ һаран, һыҡмыр. *Мыртыш кеше. Мыртыш булыу.* ■ *[Боçтан:]*

*Гөлбәҙәрҙең дә атаһы һаранлыҡ менән даны сыҡҡан мыртыш.* Б. Бикбай.

**МЫРШ-МЫРШ** *оҡш.* Танау тартҡан тауышты белдергән һүҙ. *Мырш-мырш килеү. Мырш-мырш итеү. Танауҙы мырш-мырш тартыу.*

**МЫРШЫЛДАҠ** *с.* Танауын мырш-мырш тартҡан (кешегә ҡарата). *Мыршылдаҡ бала.*

**МЫРШЫЛДАТЫУ** *к.* Мырш-мырш итеү, мырш-мырш килеү. *Хаят мыршылдап танауын тарта-тарта ошаҡларға кереште.* Һ. Дәүләтшина.

**МЫРШЫЛДАШЫУ** *к. урт. ҡар.* **мыршылдау.** *Мыршылдашып ултырыу.*

**МЫРЫЛДАУ** *к.* Мыр-мыр итеү. *Бесәйемә һөт бирҙем, арҡа йөнөн һыпырҙым. Эй, мырылдай башланы, ҡайғыларын ташланы.* Х. Ғәбитов.

**МЫСАЙ** *и.* **1.** (*йәки* **аҡ мысай**) Ҡыяҡ япраҡлылар ғаиләһенә ҡараған, ваҡ ҡына йомшаҡ башаҡлы, ялпағыраҡ ҡына ваҡ аҡ орлоҡло үлән (ҡытлыҡ йылдары орлоғон тартып ашағандар). *Мысай оно. Мысай орлоғо. Мысай икмәге.* ■ *Ҡатын-ҡыҙ, бала-сағаның күбеһе алабута, мысай баштары тиреп ҡырҙа йөрөй.* З. Биишева.

**2.** (*йәки* **ҡара мысай**) Ҡыяҡ япраҡлылар ғаиләһенә ҡараған түңәрәгерәк осло япраҡлы, суҡмарылып торған йөнтәҫ башлы, ваҡ ҡына ҡара йылтыр орлоҡло, йыуан һабаҡлы үлән. *[Рәхимә:] Ана, картуфты мысай баҫҡан, шуны йолҡһаң да әсәйгә ярҙамың тейер ине.* Ш. Янбаев.

**МЫСТАР** *и.* Турһыҡ һымағыраҡ ҡымыҙ һауыты.

**МЫҪҠАЛ** *и.* **1.** *иҫк.* Ҡаҙаҡтың 1/96 өлөшөн тәшкил иткән үлсәү берәмеге (4,26 гр.). *Мыҫҡалға һалып үлсәү.* ■ *Алтын алҡа ауыр тарта, алты мыҫҡалдан арта* (Халыҡ йырынан]. / Шул берәмек менән үлсәй торған үлсәү. *Мыҫҡал менән генә үлсәү.* ■ *Минең һөйөү артыҡ тартыр, мыҫҡалдарҙа үлсәһәң* (Халыҡ йырынан).

**2.** *күсм.* Бик бәләкәй өлөш; бөртөк. *Инсафтан бер мыҫҡал юҡ эшебеҙҙә, кенә, хәсәд, фәсад тулған эсебеҙгә.* Аҡмулла.

◆ **Мыҫҡал да** бөтөнләй, бер ҙә, һис тә. *Мине мыҫҡал да уйламайһың.* **Мыҫҡалға һалыу** һәр яҡлап уйлау, ентекләү. *Мыҫҡалға һалып һөйләү.*

● *Эшлекле миҫалға ҡарар, эшлекһеҙ мыҫҡалға ҡарар.* Әйтем.

**МЫҪҠАЛЛАУ** *к.* **1.** Мыҫҡалға һалып үлсәү. *Мыҫҡаллап үлсәү.* ■ *Ҡара икмәк киҫәген мыҫҡаллап бүлергә тура килде.* «Ағиҙел», 1967, № 11.

**2.** *күсм.* Әҙ генә булыу, әҙ-әҙләү. *Тауҙай итеп бирә ҡайғыларын, шатлыҡтарын бирә мыҫҡаллап.* Р. Ғарипов.

● *Ауырыу инә ботлап, сыға мыҫҡаллап.* Мәҡәл.

**МЫҪҠАЛЛЫҠ** *и.* Бер мыҫҡал ауырлығындағы гир.

**МЫҪҠЫЛ** *и.* Кешенең намыҫын рәнйетеп кәмһеткән, хурлаған әсе көлөү; мәсхәрә. *Мыҫҡыл һүҙе. Мыҫҡыл менән көлөү. Мыҫҡыл ташлау.* ■ *Ник һинең мәкһүр ҡалын иренең ҡарағусҡыллана? Сөнки күңелеңдә фәҡирҙәргә асыу, мыҫҡыл яна.* Ш. Бабич.

□ **Мыҫҡыл итеү** 1) кешенең намыҫын рәнйетеп, кәмләп, хурлап, әсе көлөү. *Ғабдулла сыҡты ла, минең эргәмә килеп, мине мыҫҡыл итеп әсе көлөргә тотонд*о. М. Ғафури; 2) көсләп йәки алдыҡ менән енси мөнәсәбәткә мәжбүр итеү.

**МЫҪҠЫЛЛАТЫУ** *к. йөкм. ҡар.* **мыҫҡыллау.**

**МЫҪҠЫЛЛАУ** *к.* Мыҫҡыл итеү, мәсхәрә итеү. *Батша һаман Ҡыҙраҫҡа яҡшы күҙ менән ҡарамай: гел генә шелтәләп тора, мыҫҡыллап көлә* (Әкиәттән).

**МЫҪҠЫЛЛЫ** *с.* Мыҫҡыл итә торған, мәсхәрәле. *Мыҫҡыллы ҡараш. Мыҫҡыллы тауыш. Мыҫҡыллы мөнәсәбәт.*

**МЫТЫР** [1] *с.* Юҡ-барға ҡыҫылып, ваҡ-төйәкте төпсөп барған; ваҡсыл. *Мытыр кеше. Мытыр булыу.*

**МЫТЫР** [2] *оҡш.* Ниҙер һынған һымаҡ булғанда, йыртылғанда сыҡҡан тауышты белдергән һүҙ. *Мытыр итеү. Мытыр итеп ҡалыу.*

**МЫТЫРЛАУ** *к.* Мытыр-мытыр итеү, мытыр-мытыр килеү. *Мытырлап йыртылыу.*

**МЫТЫР-МЫТЫР** *оҡш.* Ҡабат-ҡабат мытыр иткән тауышты белдергән һүҙ. *Мытыр-мытыр итеү. Мытыр-мытыр килеү.*

**МЫТЫРТ** *оҡш.* Ҡапыл мытыр итеп туҡтаған тауышты белдергән һүҙ. *[Алтын:] Ҡапыл ғына ошонда, йөрәк аҫтында ғына ни нәмәлер мытырт итеп өҙөлгән кеүек була.* Р. Ниғмәти.

**МЫУАФИҠ** [*ғәр.*] *с.* Тап килешле; ярашлы, килешле. *Мыуафиҡ булыу. Мыуафиҡ итеү. Мыуафиҡ күреү.* ■ *Беҙгә яңы .. кешеләр, заманға мыуафиҡ мәҙәни кешеләр кәрәк.* И. Насыри. *[Сәми:] Ысынлап та, Һәжәр туташ, һеҙҙең исемегеҙ үҙегеҙгә бик мыуафиҡ.* Ғ. Хәйри.

**МЫУАФФАҠ** [*ғәр.*] *с. иҫк. кит.* Булдыҡлы, һәләтле. *[Андрей:] Бөгөн бында килергә мыуаффаҡ булыуыма бик шатмын.* Д. Юлтый.

**МЫУАФФӘКИӘТ** [*ғәр.*] *и. иҫк кит.* Уңыш, уңышлыҡ. *Мыуаффәкиәткә ирешеү.* ■ *Йәшәһен Ҡыҙыл ғәскәрҙәрҙең мыуаффәкиәттәре! — тигән тауыш әле булһа колаҡ төбөндә яңғырап тора.* Ш. Хоҙайбирҙин.

**МЫШАР** *и.* **1.** Гөлйемеш сәскәлеләр ғаиләһенә ҡараған ваҡ теҙмә япраҡлы һарғылт ҡыҙыл төҫтәге әскелтем емешле ағас; миләш. *Мышар ағасы. Мышар сәскәһе.*

**2.** Шул ағастың емеше. *Мышар ҡағы. Мышар бәлеше. Мышар йыйыу.*

◆ **Мышар турғайы** *ҡар.* **турғай** [1]. **Тумыртҡа мышары** *ҡар.* **нәркәс.**

**МЫШАЯҠ** [*рус.* мышьяк] *и.* **1.** Химик элемент, ҡайһы бер минералдар составына ингән ағыулы ҡаты матдә.

**2.** Шул химик элементтан яһалған дарыу. *Тешкә мышаяҡ һалыу.*

**МЫШАЯҠЛЫ** *с.* Составында мышаяҡ булған. *Мышаяҡлы тоҙҙар. Мышаяҡлы кислота.*

**МЫШҠ-МЫШҠ** *оҡш.* Шым ғына илаған тауышты белдергән һүҙ. *Мышҡ-мышҡ итеү. Мышҡ-мышҡ килеү.*

**МЫШҠЫЛДАУ** *к.* **1.** Мышҡ-мышҡ итеү, мышҡ-мышҡ килеү. *Мышҡылдап илау.*

**2.** *күсм.* Зарланып иламһырау. *[Гөлнур:] Һин, еңгә, батыр ҡатыны, мышҡылдама!* Б. Бикбай.

**МЫШЛАУ** *к. ҡар.* **мышнау.**

**МЫШ-МЫШ** *оҡш.* Танау аша нык итеп тын алғанда сыҡҡан тауышты белдергән һүҙ. *Мыш-*

-мыш итеү. *Мыш-мыш танау тартыу.* ■ *Туҡмаҡ саҡлы ғына бер кәүҙә мыш-мыш килеп ята биләүҙә.* М. Кәрим.

**МЫШНАУ** *к.* Мыш-мыш итеп тын алыу; мыш-мыш итеү. *Басыров ике күҙен дә йомоп, йоҡлаған кеше кеүек, тигеҙ генә мышнай ине.* Ә. Бикчәнтәев. // *Ғәлимә еңгә мышнай-мышнай рәхәтләнеп йоҡлап ятҡан улы Фатих янына килеп баҫты.* Б. Ишемғол.

**МЫШТЫМ** *с.* **1.** Күп һөйләшмәҫ, өндәшмәҫ. *Мыштым бала. Мыштым булыу.* ■ *Тост күтәрҙек. Бер аҙҙан мыштымыраҡ кешеләрҙең дә теле асыла башланы.* Н. Мусин.

**2.** Аҫтыртын ғына, шым ғына насар эш ҡылыусан. *Ни йомшаҡ, ни ҡаты тәбиғәтле түгел.. Бәлки, мыштым кешелер, шуға баҫалҡы күренәлер.* В. Нафиҡов.

**3.** *диал.* Мыштыр.

**МЫШТЫР** *с.* Әкрен ҡуҙғалып, яй ғына эшләгән; ығыш. *Мыштыр кеше. Мыштыр булыу.*

**МЫШТЫРЛАУ** *к.* Яй ҡуҙғалып, оҙаҡ ҡыланыу. *Мыштырлап ҡына кейенеү.* ■ *[Рәхимә:] Килендәр, йәһәтерәк ҡаҙан аҫырға әҙерләнегеҙ. Тиҙ, мыштырламағыҙ.* Һ. Дәүләтшина.

**МЫШТЫР-МЫШТЫР** *окш. ҡар.* **ҡыштыр-ҡыштыр.**

**МЫШТЫР-ҺАШТЫР** *р.* Ҡабаланмай ғына, яйлап ҡына. *Ул [Тимер] ашыҡмай ғына мыштыр-һаштыр кейенә башланы.* Б. Бикбай.

**МЫШЫ** *и.* **1.** Боландар ғаиләһенә ҡараған оҙон аяҡлы, ҡыҫҡа ҡойроҡло, яҫы тарбаҡ мөгөҙлө ҡыр хайуаны. *Мышы балаһы. Ата мышы. Инә мышы.* ■ *Мышылар тал, уҫаҡ араһында йөрөй, ағастың йәш ботаҡтарын ашай. Бына урмандан ҙур башлы, оҙон аяҡлы мышы балаһы килеп сыҡты.* Я. Хамматов.

**2.** *диал.* Болан.

**МЫШЫЛДАУ** *к.* Мыш-мыш итеү, мыш-мыш килеү; мышнау. *Ҡыҙҙар .. мышылдап йоҡлап яталар.* З. Биишева. *Үгеҙ .. мышылдап һалмаҡ ҡына атлауын белде.* Х. Ғиләжев.

**МЫШЫУ** *и.* **1.** Һупалаҡлы ҡаты ҡоротто һалыр өсөн ау һымаҡ итеп үргән тоҡ. *Ҡоротто мышыуҙа һаҡлау.*

**2.** Ау һымаҡ итеп үргән ҡул моҡсайы.

**3.** Атты юлда ашата торған септә моҡсай. *Мышыуға һалып һоло биреү.*

**МЫЯУ** *окш.* Бесәй ҡысҡырған тауышты белдергән һүҙ. *«Өләсәй, мин дә ит аҫайым»,— тине Һөйөндөк. «Мыяу-у!» — тип ала бесәй ҙә шул уҡ теләкте белдерҙе.* З. Биишева.

**МЫЯУБИКӘ** *и. бал.* Бесәй. *Өй янында мыяубикә ята ҡарап турғайҙарҙың уйнауын.* Ғ. Әмири.

**МЫЯУЛАУ** *к.* Мыяу тип ҡысҡырыу. *Йортһоҙ бесәй балаһы ишек төбөндә зарығып, мыяулап ултыра.* Ф. Иҫәнғолов.

**МӘ** [1] *киҫ.* Ал, тот, ҡабул ит. *[Кәмәр:] Ғәзиз, мә, тамағыңа ашап ал.* Р. Ниғмәти. *[Ҡарт:] Мә, улым, минең ҡоралды ал* (Әкиәттән).

◆ **Ә тигәндә, мә тип тороу** әйткәнде тыңларға, йомошто үтәргә әҙер генә булып тороу.

**МӘ** [2], **мә-ә** *окш.* Кәзә, һарыҡтың баҡырған тауышын белдергән һүҙ — *М-ә-ә! Балаҡайҙарым, күҙ нурҙарым, һеҙ ҡайҙа булдығыҙ?* — *тип, ҡыҙғаныс тауыш менән ҡысҡырған, ти Кәзә* (Әкиәттән).

**МӘБАДИ** [*ғәр.*] *с. иҫк. кит.* Нигеҙ һалғыс, башланғыс. *Пётр I тарафынан бер указ нәшер ителеп, дворян балаларына хасаптан әгмәл әрбәгә илә мәбади һәндәсәне белеү мәжбүри ҡылынды.* М. Һаҙыев.

**МӘБНИ** [*ғәр.*] *с. иҫк. кит.* Нигеҙле, ҡороулы. *Хоҙаның хөкөмөнә мәбни фәҡирҙәр күргән зәхмәттәр.* М. Ғафури.

**МӘБРУР** [*ғәр.*] *с. иҫк. кит.* Яҡшы, изге. *Мәбрур теләктәр.*

**МӘБҺҮТ** [*ғәр.*] *с. иҫк. кит.* Ғәжәп, хайран. *Мәбһүт булыу. Мәбһүт итеү.*

**МӘГӘР** [*фарс.*] *терк.* **1.** (*йәки* **әммә мәгәр**) Эйәрсән һөйләмде ҡаршылыҡ мәғәнәһе менән баш һөйләмгә теркәй. *Көлһә көлһөндәр, мәгәр мин яҙышмай түҙә алмайым.* З. Хисмәтуллин. *Башҡаһын белмәйем, мәгәр бар бәйләнергә оҫталыҡ.* Ш. Бабич. / Кире һөйләмдең мәғәнәһен көсәйтеп, баш һөйләмгә теркәй. *Һинең генә, шағир, дәрәжәң юҡ, ҙур вазифаң мәгәр булһа ла.* Н. Нәжми.

**2.** (*йәки* **илла мәгәр**) *киҫ. мәғ.* Һөйләмдең мәғәнәһенә баҫым яһап көсәйтә. *Мәгәр бәхетлеләр ҙә була бит донъяла.* Р. Солтангәрәев. *Ҡайҙа әләкһәм дә сәмләнеп, аяуһыҙ һуғышам мәгәр.* М. Кәрим.

◆ **Әгәр ҙә мәгәр** *ҡар.* **әгәр.** *[Сәрбиямал:] Әгәр ҙә мәгәр анауы бәрәсләргә торған оҙдой һарығымдың бәрәстәрен туңдырып ҡуйһағыҙ, йәнегеҙҙе алырмын.* З. Биишева.

**МӘҒӘРИС** [*ғәр.*] *и. һөйл.* Уңышлы алыш-бирештән һуң файҙа алған кеше тарафынан ойошторолған һый. *Мәғәрис ҡуйыу. Мәғәрис эсеү.*

**МӘҒА** [*ғәр.*]: **мәға һәҙа** *бәйл. иҫк. кит.* Шуның менән бергә. *Бер остан ул ике күҙҙе сығарыр, мәға һәҙа үҙе ҡазыйға барыр.* Һ. Салихов.

**МӘҒАЗ** [*ғәр.*] *и. иҫк.* Һаҡлана, һыйына торған урын.

◆ **Мәғәз алла** алла һаҡлаһын. *Йөрәк яна, эстәр боша, ғәжәп-хайран, мәғәз алла, ислам дине булһа вайран* (Мөнәжәттән).

**МӘҒАНИ** [*ғәр.*] *и. иҫк. ҡар.* **мәғәнә.** *Үҙеңсә мирза булғас, ҙур ҙа булһаң, тәкәббер булмағыл, әй, би мәғани!* М. Ғафури.

**МӘҒАРИФ** [*ғәр.*] *и.* **1.** Аң-белем; ғилем, мәғрифәт. *Беҙ барабыҙ ҙур аҙым берлә мәғарифҡа табан.* Д. Юлтый. **Мәғарифе тәхсил** *иҫк.* белем алыу. *Мәғарифе тәхсилдән һис бер ваҡыт ирекмә.* Ш. Бабич.

**2.** Уҡыу-уҡытыу эше. *Мәғариф министрлығы.* ■ *Район мәғариф бүлектәре һәм мәктәп етәкселәре яңы уҡыу йылына мәктәптәрҙе өлгөлө итеп әҙерләү өсөн бөтә сараны күрә.* «Совет Башҡортостаны», 1965, 21 август.

**МӘҒАРИФСЫ** *и.* Аң-белем таратыу, уҡытыу эше менән шөғөлләнеүсе.

**МӘҒАСИ** [*ғәр.*] *и. иҫк.* Гөнаһлы эш, гөнаһ. *Был хәсрәткә мине күндер, мәғасиҙан минс дүндер* (Бәйеттән).

**МӘҒАШАҠА** [*ғәр.*] *и. иҫк. кит.* Ҡара-ҡаршы мөхәббәт. *Бер итәгенән тотоп алмаҡ өсөн мәғашаҡаның йөрөнө артынан уның, әҙләне күп, тота алманы.* Я. Юмаев.

**МӘҒБУД** [*ғәр.*] *и. иҫк. кит.* Табына торған изге нәмә; алла. *Күңелдең мәғбүде юҡ баш әйергән.* Б. Мирзанов.

**МӘҒБУДХАНА** [*ғәр.+фарс.*] *и. иҫк.* Ғибәҙәт йорто; мәсет. *Мәғбүдханабыҙ — аллаһыҙ, сикһеҙ, алда йылтырай, етербеҙ шикһеҙ.* Д. Юлтый.

**МӘҒБУДӘ** [*ғәр.*] *иҫк. кит.* Һөйгән ҡатын-ҡыҙ.

**МӘҒБУН** [*ғәр.*] *с. иҫк. кит.* Алданған.

□ **Мәғбүн булыу** алданыу.

**МӘҒБӘД** [*ғәр.*] *и. иҫк.* Ғибәҙәт ҡылыу урыны, ғибәҙәтхана. *Изге мәғбәдтәре алдындағы уттар берәм-берәм һүнделәр.* М. Ғафури.

**МӘҒДУД** [*ғәр.*] *с. иҫк. кит.* Һанаулы, иҫәпле. *Һәр «хужалыктан» үҙе мәғруф тиеп мәғдүд хужа.* Ш. Бабич.

**МӘҒДӘМ** [*ғәр.*] *р. иҫк. кит.* Элек, алда. *Эште тикшереүҙән мәғдәм тамаҡ туйҙырып алырға кәрәк була.* М. Ғафури.

**МӘҒДӘН** *и.* **1.** Ер аҫты байлығы, ҡаҙылма байлыҡ; руда. *Еттек беҙ таусының ҡашына. Ул ер соҡой, соҡоп мәғдән эҙләй, мәғдәнгә бай тауҙың аҫтында.* Б. Вәлит. *Бөтә мәғдәндәргә мая — күгәреп ятҡан Уралым бар.* Ҡ. Аралбаев. **2.** Металл. *Ирәндеккәй тауында, бик ҙур завод бар, унда — мәғдән ҡайната.* С. Кулибай.

**МӘҒДӘНИ** [*ғәр.*] *с.* Ҡаҙылдыҡ байлыҡҡа мөнәсәбәтле. *Мәғдәни байлыҡтар.*

**МӘҒДӘНСЕ** *и. иҫк.* Металлург. *Шәмси мәғдәнселәр съезында Зөләйхаһының атаһы Шафиков менән осрашты. Ғ. Хәйри.*

**МӘҒЖҮН** [*ғәр.*] *и. иҫк.* Мәк орлоғо, эфиүн кеүек нәмәләрҙән яһалған иҫерткес, миңрәүләткес матдә. *Мәғжүн сәйнәү.* ■ *[Мәжит:] Мәғжүн тигән нәмәне ашаһаң, кәйефте килтерә, иҫертә.* М. Ғафури.

**МӘҒЖҮНСЕ** *и. иҫк.* Мәғжүн тартыусы, мәғжүн сәйнәүсе. *Супле баш мәғжүнселәргә балдан артыҡ ләззәте.* Я. Юмаев.

**МӘҒЗУБ** [*ғәр.*] *с. иҫк.* Асыуға сәбәп булған, асыуҙы килтергән. *Мәғзуб нәмә.* **Ғәйрел мәғзуби** асыуға сәбәпһеҙ, асыуҙан тыш. *Яңынан эшкә алыуын һорарға ҡарар иттем. Ғәйрел мәғзуби генә һөрөлгәйнем бит мин.* Ғ. Ғүмәр.

**МӘҒЗҮМ** [*ғәр.*] *и. иҫк.* **1.** Дин әһеленең улы. **2.** (*баш хәреф менән*) Ир-ат исеме.

**МӘҒЗУР** [*ғәр.*] *с. иҫк. кит.* Ғәфү ителгән; ғәфү ителергә лайыҡ. *Мәғзур ҡылыҡ.* ■ *Мәғзурмын инсаф ҡылып ҡараһағыҙ, беҙ байғош бөйөктәрҙән аламабыҙ. Кесерәйтһәң, кесерәйтергә мин яраймын, үҙегеҙ ҙурайырға яраһағыҙ.* Аҡмулла. *Мөхәббәт әһле ҡайғылы һәм дә мәғзур.* М. Ғафури.

● *Бары менән мәғзур, юғына хоҙай әҙер.* Әйтем.

**МӘҒИШИ** [*ғәр.*] *с. иҫк. кит.* Тормошҡа бәйле. *Бик белеүҙер ғилем мәғиши ихтиһәдтыр, ихтиһад.* С. Яҡшығолов.

**МӘҒИШӘТ** [*ғәр.*] *и. иҫк. кит.* Тормош, көнкүреш, донъя. *Мәҙрәсәлә камил ғалим була алмаған, мәғишәттә бер кәсеп тә ҡыла алмаған* (Мөнәжәттән).

□ **Мәғишәт итеү** мәғишәтләнеү. *[Садиҡ:] Ҡыҙҙар донъяла рәхәт йәшәүҙе ирҙәре менән кулга-кул тотоношоп, тыныс эшләп, тыныс мәғишәт итеүҙә тип белмәй, култыҡлашып урамда йөрөүҙә, театрға, баҡсаларға барыуҙа тип беләләр.* Ғ. Ниязбаев.

**МӘҒИШӘТЛӘНЕҮ** *к. иҫк.* Йәшәү, донъя көтөү. *[Зариф:] Ғаиләләрегеҙ өсөн ҡайғырмағыҙ. Хоҙаның рәхмәте киң. Бары менән мәғишәтләнеп тороргар.* Н. Ҡәрип.

**МӘҒҠУЛ** [*ғәр.*] *с.* Бик урынлы, аҡылға мыуафиҡ; лайыҡ, лайыҡлы. ■ *Донъяларҙың рәте китә башлағас, Ғиниәттең башында бик мәғкул бер уй тыуҙы.* Б. Бикбай. *[Шымбай:] — Ә-ә.. Улаймы ни? Бик хуп, бик мәҡкул, кеһ-кеһ..* З. Биишева.

□ **Мәғҡул булыу** урынлы булыу; уңай булыу. *[Мулла Шәмсиәгә:] ..һине алыу тураһында төшөмдә хоҙай тәғәлә үҙе миңә әшкәртте. Тимәк, был никах бик мәғкул буласаҡ.* Б. Бикбай. **Мәғҡул күреү (табыу)** хуплау. *[Садри:] Мин үҙем дә бер аҙ ябығыуҙы мәғкул күрер инем.* Ғ. Ибраһимов.

**МӘҒЛҮБ** [*ғәр.*] *с. иҫк. кит.* Еңелгән, тар-мар ителгән. *Мәғлүб дошман.*

□ **Мәғлүб булыу** еңелеү, тар-мар ителеү. *Ғалиб булғандары мәғлүб булғандарын нindәй иҙә һәм яфа ҡыла.* М. Ғафури. *Һәр ваҡыт мәғлүб булды, аҫта ҡалды дошманым.* Ғ. Иҫәнбирҙин.

**МӘҒЛҮМ** [*ғәр.*] *с.* **1.** Билдәле, таныш. *Мәғлүм нәмә. Мәғлүм эш.* ■ *Беҙ .. Зәйнулла ишан мәҙрәсәһе янындағы мәғлүм мосафирханаға төштөк.* М. Ғафури. *Еңеү беҙҙең яҡта икәне мәғлүм ине.* И. Насыри.

**2.** Танылған, күренекле. *Ул [Әҙһәм Әлибаев] шахмат уйнарға яратҡан. Ҙур белемле, мәғлүм кешеләргә күңеле тартылған.* «Ағиҙел», 1967, № 1.

□ **Мәғлүм булыу** 1) билдәле булыу. *Төндә, йә иртә менән таңға ҡаршы аҡтарҙың һөжүмгә киләсәге мәғлүм булды.* А. Таһиров; 2) тейешле урынға барып, үҙ тураңда рәсми рәүештә хәбәр итеү. *Военкоматка барып мәғлүм булыу.* **Мәғлүм булһын[ки]** *иҫк.* ниҙер хәбәр итерҙән алда әйтелә. *[Сабир мулла:] Мәғлүм булһын ки беҙ фәҡиреегеҙ бик ауыр хәлдәргә ҡалдыҡ.* Б. Ишемғол. **Мәғлүм итеү** белдереү; хәбәр итеү.

**МӘҒЛҮМӘТ** [*ғәр.*] *и.* **1.** Ниҙеңдер булмышын асҡан белешмә; хәбәр. *Мәғлүмәт алыу. Мәғлүмәт биреү. Мәғлүмәт йыйыу.* ■ *Урал — Волга өлкәһендә нефть барлығы тураһындағы иң тәүге мәғлүмәттәр 18 быуаттың башына һәм уртаһына тура килә.* К. Тимергазин.

**2.** Аң-белем, ғилем. *Мәғлүмәт алыу.* ■ *[Ғәзиз:] Уның мәғлүмәте ни бары ете класс.* С. Агиш.

**МӘҒЛҮМӘТЛЕ** *с.* Белемле, уҡымышлы. *Мәғлүмәтле кеше. Мәғлүмәтле булыу.*

**МӘҒЛҮМӘТҺЕҘ** *с.* Белемһеҙ, уҡымышһыҙ; наҙан. *Мәғлүмәтһеҙ кеше. Мәғлүмәтһеҙ булыу.*

**МӘҒМҮМ** [*ғәр.*] *с. иҫк. кит.* Ҡайғылы, һағышлы. *[Йософ:] Хәлем дишвар, тәнем мәшрух, күңелем мәғмүм, нағяһ төштөм был михнәткә мин бер мазлум.* «Йософ вә Зөләйха».

**МӘҒМҮР** [*ғәр.*] *с. иҫк. кит.* **1.** Төҙөкләндерелгән, төҙөк. *Мәғмүр булыу.*

**2.** Халыҡ йәшәгән (ергә ҡарата).

**МӘҒМҮРӘ** [*ғәр.*] *и. иҫк. кит.* Йорт, бина. *Донъяның аҫтын-өҫкә килтергән, йәннәт кеүек гүзәл мәғмүрәләрҙе тетеп йөн иткән утлы һуғыш тукта!* Ш. Фидаи.

**МӘҒРИП** [*ғәр.*] *и. иҫк.* Ҡояш бата торған яҡ; көнбайыш. *Төндөң ҡара сапандары китте мәғрип тарафына.* Д. Юлтый.

♦ **Береһе мәғрипкә, береһе мәшриҡҡа ҡарау** төрлө яҡҡа ҡарау. *Бер күҙе мәшриҡҡа, бер күҙе мәғрипкә ҡарай.* ■ *Өйҙәр, ҡаралдылар уҙалы-ғаҙалы һалынған. Уларҙың ҡайныһы мәшриҡҡа, ҡайныһы мәғрипкә ҡарай, аунап китергә әҙер тора.* Ғ. Дәүләтшин.

**МӘҒРИФӘТ** [*ғәр.*] *и.* Аң-белем, культура. *Мәғрифәт сырағын ҡулға алып, бейеклеккә табан ашырбыҙ.* С. Ҡудаш. *Мәғрифәт эшенә өлөш индергән был тырыш китапсылар уҙҙәре хаҡында белешмә ҡалдырмаған.* Ә. Харисов.

**МӘҒРИФӘТСЕ** *и.* Аң-белем таратыусы, ағартыусы. *Феодаль дини иҫкелек йоҡоһонан уяныу осороноң мәғрифәтсеһе, шул дәүерҙең тиңдәшһеҙ шағиры булған Аҡмулла.* С. Ҡудаш. *Хөсәйниә мәҙрәсәһе бинаһы мәғрифәтсе М. Бикчурин һәм яҙыусы М. Өмөтбаевтар иҫтәлеген һаҡлап килә.* К. Мәргән.

**МӘҒРИФӘТСЕЛЕК** *и.* Мәғрифәт өлкәһендәге эшмәкәрлек. *Мәғрифәтселек эше.* ■ *Башҡорт халҡының культура тарихында Мөхәмәтсәлим Өмөтбаевтың мәғрифәтселек эшмәкәрлеге ҙур әһәмиәткә эйә.* З. Шәрҡи.

**МӘҒРУР** [*ғәр.*] *с.* **1.** Үҙ баһаһын юғары ҡуйып, үҙен дәрәжәгә тиң һанаусан; ғорур. *Мин булыр инем, әсәй, байраҡ тотҡан мәғрур көрәшсе.* Т. Морат. *Һай, Салауат! Мәғрур ағам минең! Аяҡ-ҡулын уның бығауҙар сирек быуат ҡыҫты.* «Ағиҙел», 1980, № 5.

**2.** Тышҡы күренеше менән ҙур, мөһабәт. *Мәғрур тауҙар.* ■ *Мәғрур Урал, ата булып, мине итәгендә һөйөп үҫтерҙе, ярҙарына төшһәм, Ағиҙелкәй һыу урынына шәрбәт эсерҙе.* М. Кәрим. // *Быуаттарҙың баш өҫтөнән ҡарап мәғрур тора бында ҡаялар.* Р. Ниғмәти.

**МӘҒРУРАНӘ** [*ғәр.* + *фарс.*] *р. иҫк. кит.* Мәғрур рәүештә. *Мәктәп мөғәллиме бәләкәс революционерҙың шәкерттәр араһында мәғруранә баҫып торғанын күргәс, ҡысҡырып көлөп ебәрә яҙҙы.* Б. Мирзанов.

**МӘҒРУРЛАНЫУ** *к.* Мәғрур төҫ алыу, мәғрур булыу. *Аҡҡош килһә — күлебеҙ бар мәғрурланып йөҙөр өсөн.* С. Ҡудаш.

**МӘҒРУФ** [*ғәр.*] *с. иҫк. кит.* **1.** Билдәле, танылған. *Башҡорттарҙың мәғруф әҙәмдәренең береһе Тажетдин Ялсығоловтыр.* М. Һаҙыев. *Иҫән хандың .. йорто Еҙем кәрйәһе булған. Ул хәҙер Соҡор ауылы тип мәғруф.* «Башҡорт шәжәрәләре», 1960.

**2.** Изге, яҡшы. *Мәғруф эш.*

**3.** (*баш хәреф менән*) Ир-ат исеме.

**МӘҒРӘКӘ** [*ғәр.*] *и. иҫк. кит.* Һуғыш, яу. *Уҙған йылдар мәғрәкәһендә Ғәйнә иле уртаһына меңләгән урыҫ булҡы килеп, арбанан кәлгә һуғып ятты.* «Батыршының хаты».

**МӘҒСИӘТ** [*ғәр.*] *и. иҫк. кит.* Гөнаһлы эш, гөнаһ. *Мәғсиәт ҡылыу.*

**МӘҒСҮМ** [*ғәр.*] *с. иҫк. кит.* **1.** Гөнаһһыҙ, керһеҙ, саф. *Мәғсүм бала. Мәғсүм күңел.* ■ *Килсе, мәғсүм былбылым, ожмахта үҫкән сөнбөләм.* Ш. Бабич. *Иң ваҡытың һинең бишектә тирбәлгән сағың, үтер ул мәғсүм ваҡыттарың, кире килмәҫ тағын.* С. Яҡшығолов.

**2.** (*баш хәреф менән*) Ир-ат исеме.

**МӘҒСҮМАНӘ** [*ғәр.* + *фарс.*] *р. иҫк.* Саф, ихлас күңелдән; гөнаһһыҙҙарса. *Миңлебәҙәрҙең мәғсүманә ҡараған күҙҙәре атаһының аҡтыҡ рәсемен ала ине.* К. Туйкин.

**МӘҒСҮМӘ** [*ғәр.*] *с. иҫк.* **1.** Гөнаһһыҙ, керһеҙ, саф (ҡатын-ҡыҙҙарға ҡарата). *Донъя шундай мәғсүмә ҡыҙҙар менән тулы булғанда мин нисек үләйем.* Ә. Таңғатаров.

**2.** (*баш хәреф менән*) Ҡатын-ҡыҙ исеме.

**МӘҒШУҠ** [*ғәр.*] *и. иҫк. кит.* Һөйөлгән ир кеше.
● *Ғашиҡ саз менән, мәғшуҡ наз менән йыуаныр.* Әйтем.

**МӘҒШУҠӘ** [*ғәр.*] *и. иҫк. кит.* Һөйөлгән ҡатын-ҡыҙ. *Ғашиҡтар өсөн мәғшуҡәнең шул дәрәжә илтифаты ла бик ҙур бәхет.* М. Ғафури.

**МӘҒЪЮБ** [*ғәр.*] *и. иҫк. кит.* Ғәйепле кеше; ғәйепләнеүсе. *[Хәмит бабай:] Мин ғәрсә үлтереүҙә ҡатнашмаһам да, мулланың тәүге эштәрендә ҡатнаштым,— тип мәғъюбтәр янына барып ултырҙы.* И. Насыри.

**МӘҒӘНӘ** [*ғәр.*] *и.* **1.** Һүҙҙең, атаманың һ. б. билдәле төшөнсәгә эйә булған эске йөкмәткеһе, эстәлеге. *Һүҙҙең мәғәнәһе.* ■ *Һәр һөйләмдең мәғәнәһенә ныҡлап төшөнөргә тырышып, егет бөтә зиһенен туплаңы.* Я. Хамматов. / Әйтергә телгән уй-фекер. *Айбулат Ҡотлоярҙың был уйынлы-ысынлы һүҙҙәренә ни тип тә мәғәнә бирә алманы.* Һ. Дәүләтшина.

**2.** Әһәмиәт, яҡшы һөҙөмтә. *Бында тормош, бында эш майҙаны, бында маузуғ, бында мәғәнә бар.* Д. Юлтый. *[Рәшиҙә:] Ул балаларҙы уҡытып йөрөүҙән ни мәғәнә сығыр икән.* М. Тажи.

**3.** *һөйл.* Нимәнеңдер үҙенсәлекле тәртибе, яйы. *Эштең мәғәнәһен белеп эшләү. Мәғәнә белмәгән әҙәпһеҙ кеше.*

♦ **Ысын мәғәнәһендә** бөтә асылы, булмышы менән. *Хәҙерге ауыл, уның кешеләре лә бынан биш-ун йыл элек булғанса түгел. Унда ысын мәғәнәһендә революция бара.* М. Тажи.

**МӘҒӘНӘЛЕ** *с.* **1.** Ҙур йөкмәткеле, эстәлекле. *Мәғәнәле һүҙ.* ■ *Заһит Сафура менән яратышыуының тәрән мәғәнәле булыуына шатланды.* Һ. Дәүләтшина. / Ниндәйҙер мәғәнәгә (1 мәғ.) эйә булған; нимәлер аңлатҡан. *Мәғәнәле ҡараш. Мәғәнәле итеп күҙ ҡыҫыу. Мәғәнәле итеп ҡарашыу.* ■ *Шәүәли .. мәғәнәле итеп тамаҡ ҡырып, баш сайҡап ултырҙы.* Б. Бикбай.

**2.** Мәғәнә (3 мәғ.) белгән, уйлап эш иткән. *Мәғәнәле кеше.*

**МӘҒӘНӘЛӘШ** *с.* Бер үк мәғәнәгә эйә; синонимик. *Мәғәнәләш һүҙҙәр.*

**МӘҒӘНӘҮИ** [*ғәр.*] *с.* **1.** Мәғәнәгә (1 мәғ.) мөнәсәбәтле. *Мәғәнәүи баҫым.*

**2.** Эске донъяға мөнәсәбәтле; рухи. *Мәғәнәүи кеүәт.* ■ *Ҡулыбыҙҙа булған ҡоралдарҙы Дутов, Колчак бандаларына ҡаршы йүнәлтергә, өйҙә торғандарыбыҙ ҙа эшсе-крәҫтиән хөкүмәтенә*

*матди, мәғәнәүи ярҙамда булырға тейешбеҙ.* Ш. Хоҙайбирҙин.

**3.** Уй-фараз өлкәһендәге; фарази. *Мәғәнәүи донъя.* ■ *Мәғәнәүи дуҫка мәҡамда иттихад мәшрут имәс.* Аҡмулла.

**МӘҒӘНӘҺЕҘ** *с.* **1.** Мәғәнәһе (1 мәғ.) булмаған, эске йөкмәткеһеҙ. *Сихыр һәм арбауҙарҙың теле мәғәнәле һүҙҙән ойоштороламы, әллә мәғәнәһеҙ булып, ҡоро оҡшаш өндәрҙән уҡмаштырылған көйлө әйтемдән генә торамы?* Ғ. Амантай. / Бер ни аңлатмаған, эстәлекһеҙ; буш. *Мәғәнәһеҙ ҡараш.* / Килешмәгән, килешһеҙ, урынһыҙ. // *Мәғәнәһеҙ һорау. Мәғәнәһеҙ итеп көлөү.*

**2.** Әһәмиәтһеҙ, яҡшы һөҙөмтә бирмәгән. *Мәғәнәһеҙ тормош. Мәғәнәһеҙ эш.* // *Мәғәнәһеҙ йәшәү.* ■ *Мәғәнәһеҙгә үткән һәр бер минут көйә булып киҫә бәғерҙе.* М. Хәй. *Был ҡаҙыныу уға мәғәнәһеҙ булып тойолдо.* Б. Бикбай.

**3.** Мәғәнә (3 мәғ.) белмәгән, уйлап эш итмәгән, уйлап һөйләмәгән. *Мәғәнәһеҙ кеше.* // *Мәғәнәһеҙ һөйләү.* ■ *Салих был мәғәнәһеҙҙәр менән һөйләшеп тороуҙың кәрәген тапманы.* С. Агиш.

**МӘҒӘНӘҺЕҘЛЕК** *и.* **1.** Мәғәнәһеҙ булыу сифаты, мәғәнә (1 мәғ.) белмәү. *Мәғәнәһеҙлеккә юл ҡуйыу.*

**2.** Тормошҡа файҙаһыҙ, ярашһыҙ булыу сифаты; мәғәнәһеҙ (1 мәғ.) булыу. *Мәғәнәһеҙлек күрһәтеү.* ■ *Осраҡлы был хәлдең аҡылға һыймаҫ мәғәнәһеҙлеге шунда ине: .. ул төшкән ерҙә урман юҡ, унда-бында ғына берәм-һәрәм ағас күренә.* Ә. Хәкимов.

**МӘҒӘНӘҺЕҘЛӘНДЕРЕҮ** *ҡ.* Мәғәнәһеҙ (1, 2 мәғ.) итеү, мәғәнәһеҙгә әйләндереү. *Эште мәғәнәһеҙләндереү.*

**МӘҒӘНӘҺЕҘЛӘНЕҮ** *ҡ.* **1.** Төшөнсәгә эйә булған эске йөкмәткене юғалтыу. *Мәғәнәһеҙләнгән һүҙ.*

**2.** Мәғәнәһеҙгә (3 мәғ.) әйләнеү.

**МӘҒӘРӘ** [*ғәр.*] *и. иҫк.* Тау тишеге, мәмерйә. *Мәғәрә ауыҙы бик ҙур, таш менән ҡаплап ҡуйылған.* «Алдар менән Зөһрә».

**МӘҒӘТТӘСЕФ** [*ғәр.*] *инш. иҫк. кит.* Ҡыҙғаныска, үкенескә ҡаршы. *Мәғәттәсеф, мәктүп яғылмай торҙо.* М. Ғафури.

**МӘД[Д]** [*ғәр.*] *и.* Ғәрәп орфографияһында: әлиф өҫтөнә ҡуйылған оҙон һуҙынҡыны белдергән диакритик билдә.

**МӘДЛҮЛ** [*ғәр.*] *и. иҫк. кит.* Мәғәнә, эстәлек. *Мәдлүлен үҙгәртеү.*

**МӘДФҮН** [*ғәр.*] *с.* Күмелгән, ерләнгән. *[Аҡмулла] касабә мәкбәрәһендә мәдфүндер.* Ғ. Барый. *Шиғри ут кәфене менән күңелендә мәдфүндер йәше.* Ш. Бабич.

**МӘДҺУШ** [*ғәр.*] *с. иҫк. кит.* Хайран ҡалған, ғәжәпләнгән. *Мәдһуш кеше.*

□ **Мәдһуш булыу** ғәжәпләнеү. **Мәдһуш итеү** ғәжәпләндереү.

**МӘҘБҮР** [*ғәр.*] *с. иҫк. кит.* Әйтелеп үткән, әйтелгән. *Мәҙбүр фекер.*

**МӘҘЕ** *и.* Эңерҙән һуңғы ныҡ ҡараңғы булып киткән мәл. *Мәҙе ҡабыу. Мәҙе төшөү.* ■ *Эңер төшөп, мәҙе алыуға Ҡунай теге байҙың утарына барып ингән* (Әкиәттән). **Мәҙе күҙе булыу** мәҙе яҡынлау. *Көн кисләтеп, мәҙе күҙе була башлаған.* Б. Бикбай.

**МӘҘЕХ** [*ғәр.*] *и. кит.* **1.** Дан, маҡтау. *Мәҙех шиғыры. Мәҙех алыу.* ■ *Улар халыҡ алдында оло мәҙехҡа лайыҡ булды.* Ә. Харисов. / Маҡтау шиғыры. *Мәҙех яҙыу.*

**2.** Дан, хөрмәт. *Ҡараһаҡалдың мәҙехе башҡорттар араһында көндән-көн арта барған* М. Һаҙыев.

□ **Мәҙех итеү** данлау, маҡтау. *Ҡараһаҡалды мәҙех итеп яҙған шиғырҙар һәр тарафта уҡыла ине.* М. Һаҙыев.

**МӘҘЕХЛӘҮ** *ҡ. кит.* Маҡтау, данлау. *Мөхәббәт шиғырҙары .. кешене, уның яҡты тойғоларын һәм ижади эшмәкәрлеген мәҙехләй.* Ә. Харисов.

**МӘҘИХ** [*ғәр.*] *и. иҫк. кит.* Маҡтаусы, маҡтап шиғыр яҙыусы.

**МӘҘКҮР** [*ғәр.*] *с. иҫк. кит.* **1.** Юғарыла әйтелгән, әйтеп үтелгән. *Бәйге, һабантуй кеүек байрамдар һағаланда .. етәкселек итергә, мәҙкүр байрамдарҙың тәртипле, матур булып сығыуына тырышырға кәрәк.* Ғ. Хөсәйенов.

**2.** Билдәле, таныҡлы. *Бүлеп алған ерҙәре мәҙкүр Ҡазан ҡалаһында кенәгәгә яҙылған.* «Башҡорт шәжәрәләре», 1960.

□ **Мәҙкүр итеү** белдереп, танытып һөйләү. *Рабби кәрим ҡөҙрәте илә мәҙкүр итәм оғатты.* «Башҡорт шәжәрәләре», 1960.

**МӘҘМҮМ** [*ғәр.*] *с. иҫк. кит.* Хурлап әрләнгән. *Арыҡ тәнле берәү — мәҙмүм, мәкһүр, ите бөтөп, ҡалған тирегә.* Х. Ғәбитов.

**МӘҘРӘСӘ** [*ғәр.*] *и.* Дин әһелдәре, башланғыс мосолман мәктәптәре өсөн уҡытыусылар, шулай уҡ Яҡын һәм Урта Көнсығыш илдәрендә дәүләт аппаратына хеҙмәткәрҙәр әҙерләгән урта һәм юғары белем бирә торған уҡыу йорто. .. *Сафа Ырымбурҙың атаҡлы «Хөсәиниә» мәҙрәсәһенә уҡырға инде.* Б. Бикбай. *Күҙҙәре яҙыу танығаи ауыл байҙарының барыһы ла йорт үҙәгендәге мәҙрәсәлә .. уҡыған.* Ғ. Дәүләтшин.

**МӘҘХИӘ** [*ғәр.*] *и. әҙ.* **1.** Маҡтау шиғыры, маҡтау йыры; ода. *Ғәли Соҡорой, ғалимдар менән ярышыр гилеме, сәсәндәрҙе һүҙһеҙ итер оҫта теле бар, тип Харис Мөдәрис хаҡында мәҙхиәләр яҙа.* Ә. Харисов.

**2.** (*баш хәреф менән*) Ҡатын-ҡыҙ исеме.

**МӘҘХИӘСЕ** *и. кит.* Маҡтау шиғыры яҙыусы. *Революцияның хеҙмәтсән масса тарафынан яһалғанын һәм азатлыҡҡа әле яңы юл ярыла башлағанын һиҙенеп алған Сәйфи Ҡудаш мәҙхиәсе генә булып ҡала алмай.* Ғ. Хөсәйенов.

**МӘҘҺӘП** [*ғәр.*] *и. иҫк. кит.* **1.** Ғилемдәге, ҡараш-фекерҙәге йүнәлеш.

**2.** Дин тәғлимәтендәге үҙенә бер төрлө ағым. *Сөнни мәҙһәп.*

**МӘҘӘК** [*ғәр.*] *с.* **1.** Көлдөргөс, ҡыҙыҡ; мәрәкә. *Мәҙәк һүҙ.*

**2.** Ҡылығы, ҡыланышы ғәжәп. *Мәҙәк кеше.*

**МӘҘӘКЛӘҮ** *ҡ.* **1.** Мәҙәк һүҙ һөйләү; мәрәкәләү. *[Ҡотлобай] бейеп йөрөй, үҙе мәҙәкләй.* М. Тажи.

**2.** Көлкөгә алып һөйләү; мәрәкәләү. *Кешене мәҙәкләү.*

**МӘҘӘКЛӘШЕҮ** *ҡ. урт. ҡар.* мәҙәкләү 1. *Мәҙәкләшеп ултырыу.*

**МӘҘӘКСЕ** *и.* Ҡыҙыҡ һүҙ оҫтаһы; мәрәкәсе. *Халыҡ араһынан сыҡҡан сәсәндәр, әкиәтсе,*

*йырсы, мәҙәкселәр, һис шикһеҙ, уй-тойғоларын образлы һәм музыкаль һөйләмдәргә теҙеп биреү талантына эйә булғандар.* Ғ. Амантай.

**МӘҘӘКСЕЛ** *с.* Ҡыҙыҡ һүҙ һөйләүгә, мәрәкәләп көлдөрөүгә әүәҫ; мәрәкәсел. *Мәҙәксел кеше. Мәҙәксел булыу.*

**МӘҘӘКСӘН** *с. диал.* Мәрәкәсел.

**МӘҘӘЛЛӘТ** [*ғәр.*] *и. иҫк. кит.* Хурлыҡ, түбәнлек. *Фәҡир меҫкенгә пәруа юҡ, мәҙәлләт берлә зар әйләр.* Р. Фәхретдинов.

**МӘҘӘНИ** [*ғәр.*] *с. кит.* **1.** Аң-белемгә һәм мәҙәниәткә мөнәсәбәтле. *Мәҙәни бәйләнеш. Мәҙәни эш.* ■ *Һуңғы йылдарҙа башҡорт эшсәндәре .. мәҙәни яҡтан да сағыштырғыһыҙ рәүештә үҫте.* Т. Йәнәби. *Етәр шул пәрҙәләр, шәлдәр, сапандар ҡаплау йөҙгә. Тотоп ирек әләмдәрен, баҫығыҙ мәҙәни эҙгә.* Д. Юлтый.

**2.** Аң-белеме һәм дөйөм үҫеш кимәле юғары. *Мәҙәни ил. Мәҙәни тормош.* ■ *Мәҙәни булған милләттәр уҙа бара, наҙан милләт туҙан кеүек туҙа бара.* М. Ғафури. / Аң-белеме һәм тәрбиә кимәле юғары. *Мәҙәни кеше.* // *Мәҙәни итеп һөйләшеү.* ■ *Беҙгә яңы кешеләр — уткер, эш һөйөүсән, мәҙәни хеҙмәт батырҙары кәрәк.* И. Насыри.

**МӘҘӘНИЛӘШЕҮ** *к. кит.* Мәҙәниәткә эйә булыу, мәҙәни булыу. *Мәҙәниләшеү юлында һеҙ күңелегеҙ менән дә, көн итмешегеҙ менән дә хәлле туғандарығыҙға яҡынлашырһығыҙ, уларҙы ҡыуып етерһегеҙ.* Ф. Иҫәнғолов.

**МӘҘӘНИЛӘШТЕРЕҮ** *к. кит.* Мәҙәниәткә эйә итеү; мәҙәниәтле итеү. *Артель ағзаларының матди хәле яҡшырыу менән бергә, уларҙы мәҙәниләштереү эше лә алға бара.* «Совет Башҡортостанының ун йылы», 1929.

**МӘҘӘНИӘТ** [*ғәр.*] *кит.* **1.** Кешелек йәмғиәтенең матди һәм рухи ҡаҙаныштары; культура. *Милли мәҙәниәт.* ■ *Бөтә кешелек донъяһынан, мәҙәниәттән айырылып ятҡан ауылдың халҡы илле йыл эсендә гүзәл тормош бейеклегенә күтәрелде.* «Совет Башҡортостаны», 1967, 30 май.

**2.** Аң-белем кимәле, уҡымышлыҡ. *[Сәхипгәрәй Гәүһәргә:] Ошондай һылыу туташ ауылыбыҙға мәҙәниәт таратырға килгән икән, тәгәйен, уға булырға тейеш. Әйҙә балаларыбыҙҙы аң--белем тауына үрмәләтеп алып менеп китһен.* И. Ғиззәтуллин.

**3.** Билдәле тәрбиә күнекмәһе, тәрбиәлелек. *Белмәйем, ҡайһы берәүҙәрҙә әле һаман да мәҙәниәт етешмәй инде.* М. Тажи.

**МӘҘӘНИӘТЛЕ** *с. кит.* Аң-белемгә, алдынғы тәрбиәгә эйә; культуралы. *Мәҙәниәтле кеше. Мәҙәниәтле булыу.*

**МӘҘӘНИӘТҺЕҘ** *с. кит.* Аң-белеме, тәрбиәһе түбән. *Мәҙәниәтһеҙ кеше. Мәҙәниәтһеҙ итеү.*

**МӘҘӘТ** [*ғәр.*] *и. иҫк.* Ярҙам. *[Нурый бабай] доғаларын .. ҡысҡырып-ҡысҡырып уҡый, шәйехенән мәҙәт һорай.* Ғ. Ибраһимов. *Хоҙайым мәҙәт бирһен аяҡтарға, бер маҡсатҡа талпынған ҡанаттарға.* Ш. Бабич.

◆ **Мәҙәт биреү** ҡеүәтләү; көс биреү. *Көрәшсене котлап ауылдаштары һөрән һала, мәҙәт биреп тора.* Р. Солтангәрәев. **Һеү мәҙәт** ярышта һ. б. әйҙәләп, ҡеүәт биргәндә әйтелә. — *Һоп! Һеү мәҙәт! — тип Билал ҡарт ҡысҡырыуға бөтә аттар серәнеп тарта башланы.* Т. Хәйбуллин.

**МӘҘӘТКӘР** [*ғәр. + фарс.*] *и. иҫк.* Ярҙамсы.

**МӘҘӘТСЕ** *и. иҫк.* Ярҙамсы. *Улар дин һәм донъя эштәребеҙгә мәҙәтселәр.* «Батыршаның хаты».

**МӘЖ: мәж булыу** кинәнешеп, ығы-зығы булыу, ҡайнашыу. *Күп кеше йыйылды.. Балдар эсеп, мәж булып, шатлыҡтар ҡылып, бер нисә һүҙ һөйләштеләр.* «Батыршаның хаты». **Мәж килеү** зыҡ ҡубып, ниндәйҙер эш менән булышыу. *Быуа быуырға бөтә булған машинаны сығарҙылар. Иртәнән кискә тиклем халыҡ мәж килде.* «Совет Башҡортостаны», 1966, 16 декабрь.

**МӘЖАЛ** [*ғәр.*] *и. иҫк. кит.* Көс, түҙемлек. *Ул [Мансур] бөтөнләй ғишыҡ әсире булдығыны аңланы, артыҡ мәжалы ҡалманы.* Ә. Иҫәнбирҙин. *Ҡурҡыныс хәл. Барын баян итергә юҡ мәжалым.* С. Яҡшығолов.

**МӘЖБҮР** [*ғәр.*] *с.* Сараһыҙҙан, ирекһеҙҙән нимәлер эшләргә тейешле булған.

□ **Мәжбүр булыу** сараһыҙҙан, ирекһеҙҙән нимәлер эшләргә тейеш булыу. *Дутов был һуғыштарҙа еңелеп ҡасырға, Ырымбур тирәһенән китергә мәжбүр була.* З. Шәрҡи. *Ғәйни ағай .. ахыры бисәһенең һүҙенә күнергә мәжбүр булды.* Т. Йәнәби. **Мәжбүр итеү** сараһыҙлап, ирекһеҙләп ниҙер ҡылдырыу, эшләтеү. *Ғәләү менән булған бер хәл уны [Тимерҙе] асылып, көләп ебәрергә мәжбүр итә.* Б. Бикбай. *Мәжбүр итте тормош баш әйергә, буйһонорға.* Т. Йәнәби.

**МӘЖБҮРИ** [*ғәр.*] *с.* Үтәлеше һис һүҙһеҙ тейешле, мотлаҡ булған. *Мәжбүри эш. Мәжбүри уҡытыу.* ■ *Ер идаралығы күрһәткән тәртиптәрҙе риғайә ҡылыу урмандан файҙаланыусылар өсөн мәжбүри.* Р. Алушев. *Метр системаһы мәжбүри рәүештә тормошҡа үткәрелде.* С. Агиш.

**МӘЖБҮРИЛЕК** *и.* Мәжбүри булған хәл; ирекһеҙлек, сараһыҙлыҡ. **Мәжбүрилек менән** *һөйл.* мәжбүри рәүештә. *Мәжбүрилек менән эшләп йөрөү.*

**МӘЖБҮРИӘТ** [*ғәр.*] *и. иҫк.* Мәжбүрилек. *Яҙыусы дөрөҫлөктө мәжбүриәт .. менән түгел, бәлки аңлау һәм ышаныу юлы менән танырға тейеш.* С. Ҡудаш. *Тау өҫтөндә ер ҡаҙабыҙ мәжбүриәт өҫтөнән* (Бәйеттән).

**МӘЖБҮРӘН** [*ғәр.*] *р. иҫк.* Ирекһеҙ рәүештә; сараһыҙҙан. *Мартты башлап; арт тарафҡа ҡышты ташлап, мәжбүрән ауылыма ҡайттым шәһәрҙән.* Ш. Бабич.

**МӘЖЕҮ** *к.* **1.** Йылыла оҙаҡ ятҡандан йомшарып бөршәйеү; быжыу. *Мәжегән картуф.*

**2.** *күсм.* Булдыҡһыҙланыу, ебеү; мәмәйләнеү. *[Аҡназар — Аҫылбайға:] Йә, мәжегән малай, һөйлә, ҡайҙа йөрөнөң?* М. Тажи. *[Һылыубикә:] Йәш сағым булһа. Әллә касан Юлдыбайҙың башын әйләндергән булыр инем, һеҙҙең кеүек мәжеп йөрөмәҫ инем.* С. Мифтахов.

**МӘЖИТ** [*ғәр.*] *с. иҫк. кит.* **1.** Данлы, маҡтаулы.

**2.** (*баш хәреф менән*) Ир-ат исеме.

**МӘЖЛЕС** [*ғәр.*] *и.* **1.** Рәсми ултырыш, йыйылыш. *Кәңәш мәжлесе.* ■ *Татищев доклады буйынса Министрҙар мәжлесендә Ырымбур ҡалаһын Ҡыҙыл тау тигән урынға күсерергә карар*

бирелде. М. Һаҙыев. *Байрам үткәс, оло бер мәжлес була, сәркәтип бер ен, рәйес иблис була.* Ш. Бабич.

**2.** Ҡунаҡ булышыу өсөн йыйылған йыйын; табын. *Аш мәжлесе. Ҡабул мәжлесе. Ҡымыҙ мәжлесе. Туй мәжлесе.* ■ *Китап ҡына уҡыған кешеләр әйтә, мәжлестәрҙә йырлау мөбах, тип* (Халыҡ йырынан).

● *Аштың тәме тоҙ менән, мәжлес йәме һүҙ менән.* Мәҡәл.

**МӘЖЛҮБ** [*ғәр.*] *с. иҫк. кит.* Йәлеп ителгән, тартылған. *Һиңә бит мәжлүб минең күңелем, күҙем.* М. Ғафури.

**МӘЖМҮҒӘ** [*ғәр.*] *и. иҫк. кит.* Әҙәби йәки башҡа төрлө әҫәрҙәр йыйынтығы. *Бойороҡтар мәжмүғәһе. Ҡанундар мәжмүғәһе.* ■ *Риза Фәхретдиновтың 1874—1894 йылдарға ҡараған ун томлыҡ кульъяҙмалар мәжмүғәһе үҙенә бер урын алып тора.* Ә. Харисов.

**МӘЖМӘҒ** [*ғәр.*] *и. иҫк. кит.* Йыйыла торған урын.

**МӘЖНҮН** [*ғәр.*] *и.* **1.** Булдыҡһыҙ, йүнһеҙ кеше; ебегән. *[Кәрим:] Белмәйем, был мәжнүндән эш сығармы икән?* Х. Ибраһимов *[Әбүбәкер:] Ниңә карға кеүек ауыҙыңды асып ҡаттың! Әйҙә, тиҙәр бит һиңә, мәжнүн!* Р. Ғабдрахманов.

**2.** Мөхәббәттән алйыған диуана («Ләйлә вә Мәжнүн» тигән дастандың төп шәхесе исеменән). *Ләйлә кеүек зифалығың егетте мәжнүн итер.* С. Кулибай.

**МӘЖРУХ** [*ғәр.*] *с. иҫк. кит.* **1.** Яралы, йәрәхәтле. *Мәжрух кеше. Мәжрух һалдат.* ■ *Килтерҙеләр минең алдыма быгауланған мәжрух батырҙы.* Ғ. Әмири. // *Туп, мылтыҡ, пулемёт йәҙрәләре ямғыр кеүек яуа. Бында төрлө ерҙә ыңғырашыу, «Санитар! Санитар!..» — тип ҡыҫҡырған ҡот оскос мәжрухтар тауышы.* Ш. Хоҙайбирҙин.

**2.** *күсм.* Кемдер тарафынан рәнйетелгән, йәбер, ғазап кисергән. *Мәжрух йөрәк.* ■ *Күңелдәр шатланырлыҡ нәмә юҡ, тик йәшле күҙҙәр бар. Йыраҡта ҡан.. Яҡында гел шулай мәжрух күңелдәр бар.* М. Ғафури.

**МӘЖҮС** [*ғәр.*] *и.* Мәжүсилек динендәге кеше.

**МӘЖҮСИ** [*ғәр.*] *с.* Мәжүсилек диненә бәйләнешле. *Мәжүси халыҡтар.* ■ *Башҡорттарҙың динен ҡараһаҡ, борон улар мәжүси булғандар.* Х. Әбдрәшит.

**МӘЖҮСИЛЕК** *и.* Христиан, буддизм, ислам диндәренән айырмалы рәүештә күп аллалы (ай, көн, ут, һынташ һ. б. кеүек нәмәләрҙе алла тип таныған) боронғо диндәрҙең дөйөм атамаһы. *Мәжүсилек осоро. Мәжүсилек дине.* ■ *Торна борон-борондан башҡорттарҙа изге ҡош тип һаналған, мәжүсилек ваҡытында уға табыныр булғандар.* В. Әхмәҙиев.

**МӘЖҺҮЛ** [*ғәр.*] *с. иҫк. кит.* Асыҡ түгел, билдәһеҙ. *Күңелдең иң төбөндә бер төйөн, һис сиселмәй ул. Быгаса шул көйө торған уның истиҡбалы мәжһүл.* М. Ғафури.

**МӘЖӘЛЛӘ** [*ғәр.*] *и. иҫк.* Журнал. *Ғәлиә лә Мансурҙың алып килгән газета вә романдарын шатлана-шатлана уҡый, бигерәк тә ҡатын-ҡыҙ донъяһы булған «Ғаләм нисуан» мәжәлләһен һөйә ине.* Ә. Иҫәнбирҙин.

**МӘЗ:** **мәз булыу** *шул уҡ* **мас булыу** (*ҡар.* **мас** [1]).

**МӘЗАХ** *и. ҡар.* **мәҙәк** [2].

**МӘЗАХЛАУ** *ҡ. ҡар.* **мәҙәкләү.** *[Дуңғыҙ:] Кем булып киттең, Кәзә ҡарт, беҙҙең ата-бабайҙарҙы мәзахлап?* Ш. Бабич.

**МӘЗИН** [*ғәр.*] *и.* Мәсеттә аҙан әйтеүсе; аҙансы. *Ошо шыҡһыҙ шәүлә манаранан аҙан әйтә мәзин аҡшамға.* Ғ. Әмири.

**МӘЗМУН** [*ғәр.*] *и. иҫк. кит.* Мәғәнә, эстәлек. *Тәрән мәзмун.* ■ *Ш. Фидаи нәҫер һәм нәҙем мәзмунында төрлө әҙәби парсалар яҙа ла, миңә кереп уҡып күрһәтә ине.* М. Ғафури.

**МӘЗҺӘР** [*ғәр.*] *и. иҫк. кит.*: **мәзһәр булыу** асылыу, фаш ителеү. *Ғәйебенә күҙ һалма, дуҫтың ғисмәте мәнзур имәс. Ғәйебе заһир булһа булһын, ғәйебе мәзһәр булмаһын.* Аҡмулла. **Мәзһәр итеү** асыу, фаш итеү.

**МӘЗӘ** [*фарс.*] *и. иҫк. кит.* **1.** Ләззәт, тәм. *Мәзә табыу.*

**2.** Көлкөлө ваҡ хикәйә. *Мәзә һөйләү.*

**МӘЙ** [*фарс.*] *и. һөйл.* Иҫерткес эсемлек; араҡы. *[Зифа:] Сәй эсербеҙ. Сәй янына мәйе лә табылыр.* К. Мәргән.

**МӘЙДӘТ** [*фарс.*] *с.* Бик ваҡ. *Әллә ҡара алтындай ялтыраусы мәйдәт толомдарың өсөнмө, ҡайнай ине йөрәгемдә һеҙгә булған дуҫлыҡ, иптәшлек.* Ә. Шакир.

**МӘЙЕҘ** *и. һөйл.* Кипкән йөҙөм.

**МӘЙЕЛ** [1] [*ғәр.*] *и.* **1.** Күңел ятышы, күңел ынтылышы; ҡыҙыҡһыныу, теләк. *Һабантуй ваҡытында халыҡта уйынға, күңел асыуға мәйел ҙур була.* Ғ. Хөсәйенов. *[Әхсән:] Лавкаға ҡуйып ҡараным.. «Бер ҙә мәйелем юҡ, атай, башҡа берәй хеҙмәткә ҡушһаң, гүзәл булыр ине» тигәс.., Таулыға ебәрҙем.* Х. Ибраһимов.

**2.** *эйл. ф.* Ниҙелер кешегә ихтыяр ҡуйғанда әйтелә. *Үҙ мәйеле, көсләшмәйек.* ■ *Һине шәкерт тип кенә алам мин, энем.. Теләмәһәң, мәйелең.* Ғ. Ғүмәр.

**МӘЙЕЛ** [2] [*ғәр.*] *с.* Нимәгәлер әүәҫлек, теләге булған. *Һимерергә мәйел кеше.* ■ *[Мөрит Рәмзи:] Насретдин .. һәр төрлө мәҙәкәрәләргә мәйел ине.* Ә. Харис. *[Ҡарағөлөмбәт] яманлыҡҡа, урлыҡҡа мәйел булып, берәүҙекен икенсегә һатыр булған.* «Бабсаҡ менән Күсәк».

◆ **Мәйел итеү** кемдеңдер күңелен ауҙарыу, ыңғайлатыу; арбау. *Шул ҡарауы менән ул [килен] Күсәкте айырым ҡайнар мөхәббәт менән сихырлап, үҙенә мәйел иткәйне.* «Бабсаҡ менән Күсәк».

**МӘЙЕЛ** [3] *и. диал.* Бәйел. *Мәйел аҙыу.*

**МӘЙЕЛСӘ** *р. һөйл.* Ҡулдан, хәлдән килгәнсә, теләгәнсә.

**МӘЙЕТ** [*ғәр.*] *и.* Үле кәүҙә; үлек. *Оло мәйет. Мәйетте ерләү.* ■ *Тере сағында бик бәләкәй күренгән Майгөл әбейҙең мәйете оҙон булып урындыҡ буйында ята.* К. Мәргән. *Ана юл ситтәрендә тәүге мәйеттәр ята, тирә-яҡта яралылар ыңғыраша.* Д. Исламов. **Мәйет өҫтө** мәйет булған урын. *Мәйет өҫтөндә ғәйеп һөйләмәйҙәр.*

◆ **Мәйет сыҡҡан кеүек** күңелһеҙ, ҡотһоҙ өйгә ҡарата әйтелә. **Тере мәйет** 1) бик насар хәлдәге ауырыу кешегә ҡарата әйтелә; 2) бер ни менән ҡыҙыҡһынмаған дәртһеҙ кешегә ҡарата әйтелә.

*Мещан бәхете менән ғүмер итеү тере мәйет һай үҙеңдә.* М. Хәй.

**МӘЙЕТХАНА** [*ғәр.* + *фарс.*] *и. иҫк.* Мәйеттәр ҡуя торған йорт, бүлмә; морг.

**МӘЙЕШЕҮ** *ҡ. һөйл.* Аҫҡа табан бөгөлөп төшөү; эйелеү. *Ҡар баҫып ҡайындар мәйешкән.* **Мәйешеп төшөү** *күсм.* ауырлыҡҡа, ҡыйынлыҡҡа бирешеп, ҡаушап ҡалыу.

**МӘЙКӘМ** *и. диал.* Сүмесбаш.

**МӘЙМҮН** [*ғәр.*] *и. ҡар.* **маймыл.**

**МӘЙРЕН** *и.* Балыҡ һеңере.

**МӘЙТӘМ** *иңш.* Үҙ һүҙеңдә, үҙ фекереңде әйткәндә ҡулланыла. *Мәйтәм,— тине ул [Ғибаҙулла], ҡыйыулана төшөп,— әллә һеҙҙең машина менән шыйлатып ҡына миңә барып тамаҡ туйҙырып киләбеҙме, тим* Д. Исламов.— *Уныһы шулай ҡустым, мәйтәм, кәңәшләшеберәк, бергәләберәк эш итергә кәрәк беҙгә.* Я. Хамматов.

**МӘЙХАНА** [*фарс.*] *и. иҫк.* Иҫерткес эсемлектәр эсә торған йорт.

◆ **Мәйхана килеү** *диал.* ығы-зығы булыу, мыж килеү. *Бала-сағанан башлап ҡарт әбейҙәргә тиклем шаулаша, гөрләй, мәйхана килә.* Ш. Шаһәр.

**МӘЙХУР** [*фарс.*] *и. иҫк.* Эскесе.

**МӘЙШЕЛДӘК** *с. һөйл.* Бөгөлөп-һығылып тороусан. *Мәйшелдәк сыбыҡ.*

**МӘЙШЕЛДӘҮ** *ҡ.* Бөгөлөп-һығылып тороу. *Мәйшелдәп торған таяҡ.* ■ *Оҙон арбаның үрәсәһе ауыр йөк тейәгәндә мәйшелдәп бара.*

**МӘЙШӘЙЕҮ** *ҡ. диал.* Йәмшәйеү.

**МӘК** [*рус.* мак] *и.* **1.** Йомро ҡуҙағы эсендә ваҡ ҡына ҡара орлоғо булған матур эре сәскәле үҫемлек. *Мәк сәскәһе. Мәк орлоғо. Мәк сәсеү.* ■ *Мәк сәскәһе бурҙат, алһыу була, ҡып-ҡыҙылы була, күрәне.* К. Кинйәбулатова. **Мәк башы** мәктең орлоҡло ҡуҙағы. **Әфйүн мәге** орлоғонан әфйүн алыу өсөн үҫтерелә торған мәк.

**2.** Шул үҫемлектең орлоғо. *Мәк майы.*

**3. Мәктәр, мәк һымаҡтар** *бот.* Ике өлөшлө үҫемлектәр ғаиләһе (мәк, һөйәл үләне һ. б.).

**МӘКАН** [*ғәр.*] *и. иҫк.* **1.** Берәй нәмәнең, хәл-ваҡиғаның урыны. *Ул мәканда шул кәҙәр булды сорур, ул сорурға бәлки лайыҡтыр ғорур.* М. Өмөтбаев.

**2.** Йәшәгән урын; төйәк. *Мәканым минең яткан — аты зиндан, һәр төрлө әҙәме бар яфа ҡылған.* Аҡмулла.

**3.** *күсм. һир.* Кешенең тотҡан урыны, дәрәжәһе.

□ **Мәкан булыу** урынлашыу. *Йәһәннәмдә мәкан булһаң, нәүхефөрьядың ҡани* (Бәйеттән). **Мәкан итеү** урын алыу, биләү. *Һаҡмар, Эйек, Әйҙәрҙе — атам барын мәкан иткән.* «Иҙеүкәй менән Мораҙым». **Мәкан тотоу** урынлашыу. *Ошо ергә мин яңы тоттом мәкан.* Ш. Бабич.

**МӘКАНӘТ** [*ғәр.*] *и. иҫк. ҡар.* **мәкан 1**, 2. *Мәсем хан — мосолман хан, төрки заты,.. Агиҙелдең буйы булған мәканәте.* «Бабсаҡ менән Күсәк».

**МӘКЕ** *и.* Һыу алыу, мал эсереү өсөн боҙға уйылған тишек. *Мәке уйыу. Мәке ауыҙы.* ■ *Емеш .. көйәнтә башы менән йоҡа ғына боҙҙо сайрата һуғып, мәке асты.* З. Биишева.

**МӘКЕБАШ** *и. диал.* Шишмә башы.

**МӘКЕР** [*ғәр.*] *и.* Аҫтыртын эшләнгән яуызлыҡ, яуыз ниәтле аҫтыртын эш. *Мәкер ҡороу.* // *Мәкер кеше.* ■ *Яуға сапҡан батырға ҡалҡан булған Уралтау, мәкер килмешәктәрҙең йәнен ҡыйған Уралтау.* А. Игебаев. *Фекерендә мәкер менән хәйлә тулыҡ, сирҡанмайҙыр халыҡты алдан тороп* (Бәйеттән).

**МӘКЕРЛЕ** *с.* Аҫтыртын уҫал, аҫтыртын яуыз. *Мәкерле дошман. Мәкерле хәйлә. Мәкерле уй. Мәкерле рәүештә һуғыш башлау.* ■ *Асанбай бер ҡатлы дин-шәригәт коло түгел, ул — ҡурҡыныс һәм мәкерле кеше.* И. Кинйәбулатов.

**МӘКЕРЛЕК** *и.* Аҫтыртын эшләнгән яуызлыҡ. *Үҙ файҙаһы өсөн һәр төрлө мәкерлеккә әҙер торған кеше ул Бәҙри.* Д. Исламов. *Дошман ҡараңғылыҡҡа ышыҡланып күпме мәкерлек әҙерләй.* Х. Ғиләжев. *Мәкерлектең тауышы юҡ, мин үткәрҙем уны һанап. Ул һалдатты аңғармаҫтан яралаған пуля һымаҡ.* М. Кәрим.

**МӘКИНӘ** [*рус.* мякина] *и. диал.* **1.** *ҡар.* әүрәү [2].

**2.** *ҡар.* **көрпә** [1] 1.

◆ **Мәкинә баш** *диал.* тиҙ онотоусан, хәтерһеҙ; һыу мейе.

**МӘККӘР** [*ғәр.*] *и.* Мәкерле кеше.

**МӘКЛЕ** *с.* Мәк ҡатнаштырылған, мәк һалынған, мәк һибелгән. *Мәкле икмәк.*

**МӘКЛӘНЕҮ** *ҡ.* Мәктең башы төймәләнеү, тумалыу. *Мәкләнеү дәүере.*

**МӘКЛӘҮ** *ҡ.* Мәк ҡушыу; мәкле итеү. *Мәкләп икмәк бешереү. Бәлеш өҫтөн мәкләү.*

**МӘКРУҺ** [*ғәр.*] *с. иҫк. кит.* **1.** Насар, яман. *Мәкруһ булыу.*

**2.** Шәриғәт хупламаған, кире ҡаҡҡан. *Мәкруһ эш ҡылыу.*

**МӘКРУҺЛЫҠ** *и.* Шәриғәттең хупламауы, шәриғәт кире ҡаҡҡан хәл. *Хәҙрәт .. Йәмилдең папиросын мәкруһлыҡтан сығарырға дәлилдәр килтереп: «Тәмәкене уны .. дин ҡәрҙәштәребеҙ булған төрөк илендәге ғибәҙәт йорттары эсендә лә тарталар. Унан бер зарар ҙа юҡ»,— тип хәләлләп маташа ине.* И. Насыри.

**МӘКТҮП** [*ғәр.*] *и. иҫк.* Хат йәки башҡа яҙма мөрәжәғәт. *Неплюев Нурғәле ханға мәктүптәр, һәҙиәләр күндереп, ҡаҙаҡтарҙы башҡорттарға ҡатнашыуҙан тыйып торорға ҡуша.* М. Һаҙыев.

**МӘКТӘП** [*ғәр.*] *и.* **1.** Йәш быуынға дөйөм белем һәм тәрбиә бирә торған уҡыу йорто һәм шул уҡыу йорто урынлашҡан бина. *Ауыл мәктәбе. Мәктәп асыу. Мәктәп балалары. Мәктәп директоры.* ■ *[Ҡарт:] Ана тегенеһе, күпер төбөндәге таҡта түбәлеһе, мәктәп була инде.* М. Тажи. **Башланғыс мәктәп** тәүге белем нигеҙҙәрен бирә торған өс йыллыҡ мәктәп. **Дини мәктәп** *иҫк.* уҡытыу нигеҙендә дин тәғлиматтәре һалынған өс-дүрт йыллыҡ мәктәп. *Ҡөрьән, эфтиәк ятлауҙан ғибәрәт булған дини мәктәп .. минең алты йыл ғүмеремде һәләк итте.* Б. Ишемғол. **Интернатлы мәктәп** белем һәм тәрбиә биреү менән бер рәттән ситтән килгән уҡыусыларҙы ятаҡ менән тәьмин иткән урта мәктәп. **Ибтидаи мәктәп** *иҫк.* башланғыс мәктәп. **Киске мәктәп** эшләгән кешеләрҙе кис уҡыта торған мәктәп. **Наҙанлыҡты бөтөрөү мәктәбе** культура революцияһы осорондағы ололар мәктәбе. **Оҙайтылған көнлө мәктәп**

ҡыу-уҡытыу һәм тәрбиә эшен яҡшыртыу ниәтендә уҡыусы балаларҙы дәрестән һуң эш көнө бөткәнсе уҡытыусылар ҡарамағында ҡалдырған мәктәп. **Урта мәктәп** урта белем бирә торған ун йыллыҡ мәктәп. **Эшсе йәштәр мәктәбе** *кар.* **киске мәктәп.**

**2.** Махсус белем бирә торған уҡыу йорто. *Музыка мәктәбе. Спорт мәктәбе. Һөнәрселәр мәктәбе.*

**3.** Ниндәйҙер эш барышында тупланған тәжрибә, алынған белем; күнекмә. *Тормош мәктәбе.* ■ *Тыныс хеҙмәт һағында уяу торған Совет Армияһы беҙҙең йәштәрҙе боевой һәм политик яҡтан әҙерләүҙең иң яҡшы мәктәбе булып тора.* Ғ. Рамазанов.

**4.** Әҙәбиәт, сәнғәт, фән, ижтимағи-политик фекерләү өлкәһендәге ҡараштар, методтар, йүнәлеш, ағым. *Башҡорт тел ғилемендәге Ж. Ғ. Кейекбаев мәктәбе.*

**МӘКТӘПДАР** [*ғәр.* + *фарс.*] *и. иҫк.* Мәктәп тотҡан кеше, мәктәп хужаһы.

**МӘКТӘПКӘСӘ** *с.* Уҡырға төшкәнгә тиклем. *Мәктәпкәсә йәштәге балалар.* ■ *Балаларҙың төп тормош гәҙәттәре мәктәпкәсә йәштә тәрбиәләнә.* «Башҡортостан уҡытыусыһы», 1969, № 5.

**МӘКҮШТӘҮ** *к. диал.* Киңгәү.

**МӘ-КӘ-КӘ** *окш.* Кәзә-һарыҡ баҡырған тауышты белдергән һүҙ. *Бер көндө алты кәзә сығып киткән ҡырҙарға, үлән ашап йөрөргә, мә-кә-кә тип йырларға.* Ғ. Ғүмәр.

**МӘКӘЛӘҮ** *к. диал.* Һупалау. *Улар [пленныйҙар] русса мәкәләп маташа.* Ж. Кейекбаев.

**МӘКӘН** *с. диал.* Йәмшек танаулы. *Мәкән кеше.*

**МӘКӘРЙӘ**[1] *и. диал.* Мәрйен.

**МӘКӘРЙӘ**[2] *и. диал.* Ваҡ ау, сабаҡ ауы.

**МӘКӘТИН** *и.* Бер башҡорт ырыуының исеме.

**МӘҠБУЛ** [*ғәр.*] *с. иҫк. кит.* Ҡабул күрелгән, ҡабул ителгән; яраҡлы. *Мәҡбул һүҙ.* ■ *Йәрмәкиҙең муллалыҡта тормағы мәғҡул түгел, нишләйһең шунан бүтән юл беҙҙә һис мәҡбул түгел.* Ш. Бабич.

**МӘҠБӘРӘ** [*ғәр.*] *и. иҫк.* Кеше ерләнгән урын; ҡәберлек.

**МӘҠЛУҒ** [*ғәр.*] *с. иҫк. кит.* Ҡуптарылған, йолҡолған. *Ағыр улмыштыр уға тәрк мәҡлуғ, әсирәткә алубән ҡаты мәлфуф.* С. Яҡшығолов.

**МӘҠСУД** [*ғәр.*] *и. иҫк. кит.* **1.** Маҡсат иткән, теләгән нәмә.

**2.** Маҡсат.

**3.** (*баш хәреф менән*) Ир-ат исеме.

**МӘҠҺУР** [*ғәр.*] *и. иҫк. кит.* Ҡәһәрле, йәберле. *Иблис, мин әҙәмдән артығыраҡмын, тип маҡтанды, шуның өсөн һәм донъяла хур вә мәҡһур булды.* М. Өмөтбаев.

**МӘҠӘЛ** [*ғәр.*] *и.* Тормош тәжрибәһенән сығып, ыҡсым ғына итеп әйтелгән тәрән мәғәнәле тапҡыр һүҙ. *Мәҡәл әйтеү.* ■ *Мәҡәлдәр .. бик борон замандарҙан уҡ кешене әхлаҡ-тәртипкә, аҡылға өйрәтеү өсөн ҡулланылған.* Ж. Кейекбаев. *Мәҡәл — халыҡ ижадының иң боронғо төрҙәренең береһе.* К. Әхмәтйәнов. *«Илле йылда ил яңырыр»,— ти башҡорт халыҡ мәҡәле.* М. Хисмәтов.

● *Һүҙ күрке мәҡәл менән.* Әйтем. *Ир матур һаҡал менән, һүҙ матур мәҡәл менән.* Әйтем. *Мәҡәл әйткән — юл өйрәткән, әйтем әйткән — күңел йыуатҡан.* Әйтем.

**МӘҠӘЛЛӘШЕҮ** *к.* Мәҡәлгә әйләнеү, мәҡәл хәленә килеү. *Мәҡәлләшкән фекер.*

**МӘҠӘЛЛӘШТЕРЕҮ** *к.* Мәҡәлгә әйләндереп әйтеү, мәҡәл итеү. *Халыҡ йәмғиәттәге синфи бүленеш, синфи көрәш хәлдәрен мәҡәлләштергән.* Ғ. Амантай.

**МӘҠӘЛӘ** [*ғәр.*] *и.* Ғилми йәки публицистик стилдә яҙылған һәм газета-журналда, берәй йыйынтыҡта баҫылып сыҡҡан бәләкәй күләмле хәбәр. *Баш мәҡәлә. Ғилми мәҡәлә. Мәҡәлә яҙыу.* ■ *Ҡайнап торған тормош ҡаҙанынан хәбәр, шиғыр, мәҡәләләр .. алып яҙыла.* Ғ. Хәйри.

**МӘЛ**[1] *и.* **1.** Нимәлер өсөн билдәле бер ваҡыт, тейешле ваҡыт. *Сәсеү мәле. Ураҡ мәле. Мәлен белеү.* ■ *Һәр бер емеш үҙ мәлендә бешә, ваҡытынан үҙһа өҙөлөп төшә. Һәр бер эште эшлә үҙ мәлендә.* Ҡ. Даян. Ниндәйҙер эш-хәл, ваҡиға менән билдәләнгән ваҡыт, осор. *Ошо күренеш аша шағир мәлдең ҡатмарлы ситуацияһын кәүҙәләндерергә ынтылыш яһай.* Ғ. Хөсәйенов. *Һуғыш мәле. Ауыр. Ә мин өйҙә. Кескәйҙәргә әсәй, атай ҙа. Атай ситтә. Әсәй үлеп китте, үлгәндәр шул кире ҡайтмайҙар.* К. Кинйәбулатова.

**2.** Көн, тәүлектең нимә менәндер билдәләнгән ваҡыты; саҡ. *Йоҡларға ятҡан мәл. Уңай мәл.* ■ *Һүҙ оҙаҡҡа барманы. Көн кискә ауышып, эңер мәле етеп килә ине.* Ш. Шәһәр. *Көнсығышта таң атҡан бер мәлдә көнбайышты ялҡын ялманы.* М. Кәрим.

**3.** Йылдың тәбиғәттәге үҙгәреш менән билдәләнгән айырым бер осоро; миҙгел. *Көҙ мәле. Ҡышҡы мәлдә.* ■ *Яҙғы ташҡындар мәле, кескәй йылғалар ҙа ярҙарынан сыҡҡан. Ҡайҙа ҡарама һыу, батҡаҡлыҡ, юл юҡ.* Д. Исламов.

◆ **Бер мәл** берҙән бер ваҡыт, бер заман. *Бер мәл уң яҡ ситтә тауыш ҡупты, йөрәк өҙөп кемдер аҡырҙы.* Ғ. Сәләм. **Эҫе мәлдә** һуң булмаҫ борон, ваҡытында.

**МӘЛ**[2] *и. диал.* Әмәл. *Атаҡайым мине йәшләй бирҙең, аҫраҡай мәлең юҡмы ни?* (Сеңләүҙән).

**МӘЛАИК** [*ғәр.*] *и. кар.* **мәләк.** *Минең күңелемдә ай-йондоҙҙар, мәлаиктар барыһы йоҡлайҙар.* Д. Юлтый.

**МӘЛҒҮН** [*ғәр.*] *с.* **1.** Ләғнәт ителгән, ҡәһәрләнгән, нәфрәт уятҡан; ләғин. *Мәлғүн кеше.* // *Яуыз мәлғүн.* ■ *Теге мәлғүн көстәр, алтын таждар, ҡарағандар фәҡәт үҙ йәйын.* Д. Юлтый. *Салауаттың тоғро дуҫтары мәлғүн дошмандарҙы көл яһар* (Халыҡ йырынан). / Әрләгәндә, яманлағанда әйтелә. *Тағы бер ҡош ояһын туҙҙырҙығыҙмы әллә, мәлғүндәр.* Ә. Вахитов. *Ләстит һатырға, шапырынырға ярата торғайны, мәлғүн.* С. Кулибай.

**2.** *и. мәғ.* Шайтан. *Ергә аттыҡ беҙ быны [иблисте] мәхрүм итеп, барса шайтандарға баш мәлғүн итеп.* Ш. Бабич.

◆ **Дәжжәл мәлғүн** дини хөрәфәтсә, ҡиәмәт булыр алдынан сығасаҡ бер алдаҡсы; дәжжәл.

**МӘЛҒӘНӘТ** [*ғәр.*] *и. иҫк.* Ләғнәт итерлек эш-хәл, нәмә.

**МӘЛҒӘНӘТЛЕ** *с. иҫк.* Ләғнәтле, ҡарғышланған. *Ағыуланы ап-аҡ тормошомдо мәлғәнәтле ҡара күңелдәр.* Х. Ғәбитов.

**МӘЛДЕРӘҮ** *к. диал.* Мәлйерәү.

**МӘЛЕМ** *и. диал.* Һеләүһен.

**МӘЛЕС** *и. һөйл.* Һарыҡтың киң, яҫы ҡойроҡло бер тоҡомо. // *Мәлес һарыҡ.*

**МӘЛИКӘ** [*ғәр.*] *и.* **1.** Ҡатын батша.

**2.** Батша ҡатыны; ханса.

**3.** (*баш хәреф менән*) Ҡатын-ҡыҙ исеме.

**МӘЛИХ** [*ғәр.*] *с. иҫк. кит.* **1.** Һөйкөмлө, яғымлы. *Мәлих кеше. Мәлих булыу.*

**2.** (*баш хәреф менән*) Ир-ат исеме.

**МӘЛЙЕРӘТЕҮ** *к.* Быуындан яҙҙырыу; хәлһеҙләндереү, бәлйерәтеү.

**МӘЛЙЕРӘҮ** *к.* **1.** Ауырыуҙан йәки башҡа сәбәптән көс-хәл бөтөп, быуын һыҙланып ҡалыу; хәлһеҙләнеү, бәлйерәү. *Вәлетдин мәлйерәп бөткән оләсәһе Ғизелниса карсыҡ менән икәү генә тора.* М. Кәрим.

**2.** *күсм.* Ихтыяр көсөн юғалтып ҡаушап ҡалыу. *[Мораҙым:] Нишләп һуң әле ошо йәш кенә ҡыҙ алдында мәлйерәп төштөм.* Ғ. Әмири. *[Ғәйшә — Мәрзиәгә:] Ярар, мәлйерәмә. Әсәй кеше бер ҡаҡһа, йөҙ һөйөр.* С. Кулибай.

**МӘЛЙЕҮ** *к. диал.* Мәлйерәү.

**МӘЛКЕҮ** *к. диал. кар.* **мәлйерәү** 2.

**МӘЛЛЕ**[1] *с.* Тейешле ваҡытта, форсатҡа ярашлы булған; ваҡытлы. *Бынау ямғыр бик мәлле булды әле, хәҙер китә инде игендәр күтәрелеп.*

**МӘЛЛЕ**[2] *с. диал.* Ниҙелер башҡарырлыҡ көсө, хәле булған.

● *Сәмле кеше, мәлле кеше.* Әйтем.

**МӘЛЛӘ** *и. иҫк.* Тула һымағыраҡ ҡалын ҡаты йөн туҡыма. *Ҡалын мәллә. // Мәллә бишмәт.* ■ *Өҫтөнә ҡара мәлләнән тегелгән бөрмә билле сәкмән кейгән һимеҙ битле хужа күренде.* Н. Ҡәрип.

**МӘЛФУФ** [*ғәр.*] *с. иҫк. кит.* Ураулы, төрөүле. *Агыр улмыштыр уга торк мәклуг, әсирәткә алубән каты мәлфуф.* С. Якшығолов.

**МӘЛҺЕҘ**[1] *с.* Ваҡытҡа ярашһыҙ; ваҡытһыҙ. *Мәлһеҙ ҡунаҡ. Мәлһеҙ ямғыр. // Мәлһеҙ йөрөү. Мәлһеҙ ҡайтыу.* ■ *Йәшә тормош! Беҙҙең илдә мәлһеҙ үлем тамыры киҫелә.* Б. Бикбай. *Һуғыш, һуғыш.. Беҙ үҫтергән гөлдәр тейешме ни мәлһеҙ һулырға?* Р. Бикбаев.

**МӘЛҺЕҘ**[2] *с. диал.* Ниҙер башҡарырлыҡ көсө, хәле булмаған. *Мәлһеҙ кеше.* ■ *Баксала йөрөп туйгас, мәлһеҙ булып арығас, ҡунаҡтар өйгә ҡайта.* З. Биишева.

**МӘЛӘК** [*ғәр.*] *и. кит.* Фәрештә, мәлаик. *Бер мәләк тә ҡаҡмаһын зекри ҡанатын өн менән.* Д. Юлтый. *Нурлы шәфҡәттән яралған бер мәләктәй саф ҡатын.* Ш. Бабич.

**МӘЛӘКҮТ** [*ғәр.*] *и. иҫк. кит.* **1.** Батшалыҡ.

**2.** Дини хөрәфәт буйынса рухтар, фәрештәләр донъяһы.

**МӘЛӘКӘ** [*ғәр.*] *и. иҫк.* Эш барышында үҙләштерелгән оҫталыҡ; тәжрибә. *Мәләкә хасил итеү.*

**МӘЛӘҮ** *и.* Үлән тамыры ҡаҙа торған үткер осло таяҡ. *Осло мәләү.* ■ *Мәләү тотоп тауҙан йыуа ҡаҙҙым, үлән тамырҙары кимерҙем.* Б. Вәлит.

**МӘЛӘҮЛӘҮ** *к.* Мәләү менән соҡоу. *Һарына мәләүләү.*

**МӘЛӘШӘҮ** *и. диал.* Мәләү.

**МӘМАТ** [*ғәр.*] *и. иҫк. кит.* Үлем. *Шулай итеп үҙ-ара талаш берлән милләттең мәматына яңашабыҙ.* М. Татлыбаев.

**МӘМДУХ** [*ғәр.*] *с. иҫк. кит.* Маҡтаулы, маҡтауға лайыҡ. *Мәмдух кеше. Мәмдух булыу.*

**МӘМЕЛДӘК** *с. һөйл.* Күп һөйләүсән; ләпелдәк.

**МӘМЕЛДӘҮ** *к. һөйл.* Күп итеп өҙлөкһөҙ һөйләү; ләпелдәү. *Ғәбделминов .. һүҙҙәрен һуҙып, туҡтауһыҙ мәмелдәй, тамашасыларҙа көлкө бер меҫкен тәьҫире ҡалдыра.* Р. Ниғмәти.

**МӘМЕРЙӘ** [*ғәр.*] *и.* Ер аҫтында барлыҡҡа килгән ҡыуышлыҡ; тау тишеге. *Шүлгән мәмерйәһе. Мәмерйә ауыҙы. Мәмерйәле тау.* ■ *Мәмерйәләр эзбизташ, гипс, доломит, тоҙ кеүек һыуҙа тиҙ ирей торған тоҡом булған ерҙә осрай.* М. Хисмәтов.

**МӘМЕШ** *с. һөйл.* Булдыҡһыҙ, ебегән; мәмәй. *Мәмеш кеше. Мәмеш булыу.*

**МӘМЕШЛӘНЕҮ** *к. һөйл.* Мәмеш булыу, мәмәйләнеү.

**МӘМЕШӘК** *и. диал.* Энәлек. *Мәмешәк йыйыу.*

**МӘМЛҮК** [*ғәр.*] *и. тар.* Мысыр солтандарының ҡол ителгән төрки халыҡтарҙан һәм ҡайһы бер Кавказ халыҡтарынан төҙөгән һайланма ғәскәрендәге яугир. *Египеттағы Әйүптәр династияһының һуңғы батшалар заманында .. ҡол ителгән кешеләрҙән төҙөлгән махсус гвардия булған. Был һуғышсыларҙы мәмлүктәр тип йөрөткәндәр.* Ә. Харисов.

**МӘМЛӘКӘТ** [*ғәр.*] *и.* Дәүләт, ил. *Сит мәмләкәт кешеһе.* ■ *Киткән бәлә, киткән һәләкәт. Еңеү түйын иткән мәмләкәт, илгә кире ҡайтҡан бәрәкәт.* М. Кәрим.

**МӘМ-МӘМ** *и. бал.* Аҙыҡ, ашамлыҡ. *Мәм-мәм бешереү. Мәм-мәм биреү.*

**МӘМНУҒ** [*ғәр.*] *с. иҫк. кит.* Тыйылған. *Мәмнуғ булыу.* ■ *Ошо көнгә саклы ҡаҙаҡ халкына рәсми һурәттә мәҙрәсә һалмаҡ мәмнуғ ине, инде ихтыярлыҡ бирелде.* М. Ғафури.

**МӘМНҮН** [*ғәр.*] *с. иҫк. кит.* Риза, ҡәнәғәт. *Мәмнүн итеү.* ■ *Тыңлаусылар ҡарттың әкиәтенән барыһы ла мәмнүн булды.* С. Ҡудаш.

**МӘМНҮНИӘТ** [*ғәр.*] *и. иҫк. кит.* Ризалыҡ, ҡәнәғәтлек тойғоһо. *«Мәжит Ғафуриҙы киләһе кесаҙнаға ҡунаҡҡа саҡырып ҡайттым. Ул бик ҙур мәмнүниәт менән килергә булды»,— тине Харис.* С. Ҡудаш.

**МӘМТӘКӘ** *и. диал.* Бәпембә. *Мәмтәкә сәскәһе.*

**МӘМӘЙ** *и.* **1.** *бал.* Тәмле аҙыҡ. *Мәмәй бешереү. Мәмәй һорау.* ■ *Мәмәй бирҙем, тәтәй бирҙем, арҡаһынан тотоп һөйҙөм.* К. Кинйәбулатова.

**2.** (*йәки* **мәмәй ауыҙ**) *күсм.* Эшкә-нигә булдыҡһыҙ; йомшаҡ, ебегән кеше. *Йыһаннурҙы атаәсәһе ҡартайғансы ҡулына эш тейгеҙмәй үҫтермәһә, шул тиклем мәмәй ҙә булмаҫ ине.* Н. Мусин. *[Ҡаһымбай:] Беҙ генә ул мәмәй ауыҙҙар, үҙ хаҡыбыҙҙы үҙебеҙ яулай алмайбыҙ.* И. Ғиззәтуллин.

**МӘМӘЙЛӘНЕҮ** *к.* Булдыҡһыҙлыҡ, йомшаҡлыҡ күрһәтеү; мәмәй ауыҙ булыу. *Беҙҙең граждандарыбыҙ аҡ гвардиясыларыбыҙ менән һуғышыу йылдарында сыныкты.. Мәмәйләнеп торор саҡ түгел ине. Кешеләр тәүәккәл, ҡоростай нык булып үҫте.* «Ағиҙел», 1968, № 4.

**МӘЪ-МӘЪ: мәъ-мәъ итеү** *бал.* һуғыу.

**МӘН** [1] [*ғәр.*] *и. иҫк.* Зат, шәхес; кемсә. *Күп замандан бире көткән мән килә.* Ш. Бабич.

**МӘН** [2] [*ғәр.*] *и. иҫк.* Ауырлыҡ үлсәү берәмеге (дөйөм мән — 898,5 г, Тәбриз мәне — 2,944 кг, шаһ мәне — 5,888 кг).

**МӘН** [3] *и. һөйл.* Мәне. *Мән белмәү. Мән белмәгән кеше.*

**МӘНАЗИЛ** [*ғәр.*] *и. ҡар.* **мәнзил.**

**МӘНБӘҒ** [*ғәр.*] *и. иҫк. кит. ҡар.* **сығанаҡ** [1]. *Байлыҡ мәнбәге. Матурлыҡ мәнбәге.* ■ *Ҡабыҡ эҙерләү өсөн мәнбәг булып хеҙмәт иткән ҡара тал бар.* «Совет Башҡортостаның ун йылы», 1929.

**МӘНГӘШӘР** *и. диал.* Мөншөгөр.

**МӘНДӘШ** *и.* Төп яғы йыуан, осо нәҙек, нык ботаҡлы булып, төҙөләшкә ярамаған ағас.

**МӘНЕ** [*ғәр.*] *и.* Нимәнелер эшләү, башҡарыу айышы, уға хас тәртип. *Эш мәнеһе. Һүҙ мәнеһен белеү. Мәне белмәү.* ■ *— Бына беҙҙең Айбикә киленде әйтәм әле, бер эш мәнеһе белмәй бит, бахырҡай. Әйтә-әйтә, өйрәтә-өйрәтә йәнең сыға.* Һ. Дәүләтшина.

**МӘНЕҒ** [*ғәр.*] *и. иҫк. кит.* Ниҙеңдер тыйылышы.

□ **Мәнеғ итеү** (*йәки* **ҡылыу**) рөхсәт итмәй, тыйыу. *Яҡын ерҙәрҙә бесән сабыу, иген сәсеү өсөн урман таҙартыу мәнег ителде.* Ғ. Ғисмәти. *Йортобоҙҙа тиген йәки әҙ баһаға табыла торған дегет менән күн эшләмәк мәнег ҡылына.* «Батыршаның хаты».

**МӘНЕҒЛӘНЕҮ** *к. иҫк.* Тыйылыу. *Мәнегләнгән эш.*

**МӘНЕҒЛӘҮ** *к. иҫк.* Тыйыу. *Тәмәке тартыуҙы мәнегләү.*

**МӘНЕЙ** [*ғәр.*] *и. һөйл.* Аталыҡ орлоғо һәм шул орлоҡтарҙан торған шыйыҡлыҡ; сперма.

**МӘНЕЛЕ** *с. һөйл.* Мәне белгән, эш, һүҙ мәнеһен аңлаған, әҙәп һаҡлаған. *Мәнеле бала.*

**МӘНЕҺЕҘ** *с.* Мәне белмәгән, эш, һүҙ мәнеһен аңламаған, әҙәп һаҡламаған. *Мәнеһеҙ кеше.* ■ *— Уныһын да һиҙербеҙ, беҙ улай мәнеһеҙ түгел. Алдыбыҙҙағы түмәрҙе күрәбеҙ.* И. Насыри.

**МӘНЖӘНИК** [*ғәр.*] *и. иҫк.* Хәрби нығытмаларҙы емереү өсөн ҙур таш ырғыта торған боронғо һуғыш ҡоралы; таш аткыс. *[Хәҙрәт:] Мосолмандар ул кафырҙарҙы һәләк итә торған ҡылыс, уҡ, мәнжәник кеүек ҡоралдар менән һуғышырҙар.* М. Ғафури.

**МӘНЗИЛ** [*ғәр.*] *и. иҫк.* **1.** Туҡтап китә торған урын. *Мәнзилгә туҡтау.*

**2.** Йорт, торлаҡ.

**МӘНЗИЛХАНА** [*ғәр. + фарс.*] *и. иҫк.* Юлаусылар туҡтай торған йорт; ҡунаҡ йорто.

**МӘНЗУР** [*ғәр.*] *с. иҫк.* Ҡаралған, күрелгән. *Ғәйебеңә күҙ һалма, дуҫтың ғисмәте мәнзур имәс.* Аҡмулла.

**МӘНЛЕ** *с. һөйл.* Мәнеле. *Мәнле булыу.*

**МӘНСАБ** [*ғәр.*] *и. иҫк. кит.* Вазифалы урын, хеҙмәт урыны. *Бер кешенең башына һеңгән ике мәнсаб тәме, ҡулда мәнсаб юк ваҡытта был кеше ысын хөр ине.* М. Ғафури.

**МӘНСУБ** [*ғәр.*] *с. иҫк. кит.* Кем йәки нимәгәлер бәйле, мөнәсәбәтле булған. *Фәнгә мәнсуб эш.* ■ *Беҙҙең бабаларыбыҙҙың шәжәрәләре мең һаҙаҡлы Урҙас бейгә мәнсуб була.* «Башҡорт шәжәрәләре», 1960. *Кеше шелтәһе һис үтмәҫ күңелгә, әгәр булһа ғишыҡ сын ғишыҡҡа мәнсуб.* М. Ғафури.

**МӘНСУХ** [*ғәр.*] *с. иҫк. кит.* Юҡҡа сыҡҡан, яраҡлығы бөткән. *Иҫкеһеме, яңыһымы.. ҡайһы мәнсух, ҡайһы насих, уныһын инде һин айыр.* Ш. Бабич.

□ **Мәнсух булыу** юҡҡа сығыу. *Мәнсух булыр хәҙер иҫке диндәр, иҫке таурат, иҫке йолалар.* М. Ғафури.

**МӘНФҮР** [*ғәр.*] *с. иҫк. кит.* Ерәнгес, нәфрәт тойғоһо уятҡан. *Ҡан томанында йөҙә мәнфүр үлем ғифриттәре.* Ш. Бабич.

**МӘНФӘҒӘТ** [*ғәр.*] *и.* **1.** Кем йәки нимәнеңдер файҙаһы, тейгән яҡшылығы. *Унан мәнфәгәт юҡ. Мәнфәгәт табыу.* ■ *Мәнфәгәт сыҡҡан сағында серле күҙҙәр ялт итә.* Ш. Бабич.

**2.** Кем йәки нимәнеңдер ихтыяжы, талабы. *Синфи мәнфәгәт. Ил мәнфәгәте. Хужалыҡ мәнфәгәте. Үҙ мәнфәгәтеңде һаҡлау.* ■ *Халыҡ колхоз мәнфәгәте менән йәшәй.* М. Тажи. *Улы Гөлнәзирә еңгәне донъяға бәйләп тотҡан берҙән-бер көс. Уның башҡа бер мәнфәгәте лә юҡ.* Ғ. Әмири.

□ **Мәнфәғәт итеү** файҙа итеү, файҙаланыу. *Баяр йәберлек менән алған ерҙе, һатып алдым, тип мәнфәгәт иткән* (Әкиәттән).

**МӘНФӘҒӘТЛӘНЕҮ** *к. ҡар.* **файҙаланыу** 1. *Бөтә Ирәндек тауында булған сейә, еләк ағастарынан мәнфәгәтләнеү Брагиндың рөхсәтендә булған.* К. Мәргән.

**МӘНФӘҒӘТҺЕҘ** *с.* Файҙаһыҙ. *Үләне лә, ағасы ла булмаған мәнфәгәтһеҙ тау.*

**МӘНХУС** [*ғәр.*] *с. иҫк. кит.* Бәхетһеҙ. *Шөйлә мәнхус беҙҙәйем ки ҡап-ҡараңғы көндәрем.* Я. Юмаев.

**МӘНҺЕҘ** *с. һөйл.* Мәнеһеҙ.

**МӘНШҮР** [*ғәр.*] *и. иҫк.* Бойороҡ, ҡарар. *[Мулла:] һинең ни, кем Кинйә, муллалыҡҡа мәншүрең юҡ та баһа.* Ғ. Ибраһимов.

**МӘНӘҮРӘТЕҮ** *к. диал. ҡар.* **иҙрәтеү** 2. *Ап-аруҡ ҡына йонсоткан. Ҡояш нурҙары мәнәүрәтеп кенә йоҡоно килтереп ебәрҙе.* Р. Солтангәрәев.

**МӘҢГЕ** I *с. ҡар.* **мәңгелек.** *Мәңге боҙ.* ■ *Мәңге һыуға шундай көс биргән хоҙа, шундай көс ки — ҡөҙрәтулланы юя!* Ш. Бабич.

II *р.* **1.** Дауамы сикләнмәгән ваҡыт буйына, ғүмер буйына. *Ленин — даһи, беҙҙең карабл дә мәңге үлмәҫ бөйөк капитан.* Х. Ҡунаҡбай. *Бөтә тиҙ донъя малы, мәңге тормай, белем бөтмәй, юйылмай һәм серемәй.* Ш. Бабич. / Һәр ваҡыт, гел. ■ *Ҡарлы башын Уралдың .. матурлығың ҡырҙарҙың мәңге маҡтар инем мин.* Салауат Юлаев.

**2.** Бер ҡасан да, бер ваҡытта ла. *[Әбей:] Арыҫлангәленән дә ҡәҙерле ҡунаҡ беҙгә мәңге килә- сәк түгел.* Ғ. Дәүләтшин. *Ҡайҙа ғына барһа,*

*ҡайҙа йөрөһә, уҡыған баш мәңге хур булмай* (Халыҡ йырынан).

♦ **Мәңге йәшә** кешене яҡшы эш өсөн хуплағанда әйтелгән теләк һүҙе. *Ҡәҙерле Урал атабыҙ, .. халыҡ бәхете өсөн мәңге йәшә!* «Урал батыр». **Мәңге йоҡо** үлем. **Мәңге йоҡоға талыу** үлеү.

**МӘҢГЕГӘ** *р.* Ғүмер буйы, мәңге. *Там минең күҙ йәштәрем, там, там, тамып тор мәңгегә. Ян минең аҡ күкрәгем, ян, ян, янып тор мәңгегә.* Ш. Бабич. / Сикһеҙ ваҡытҡа, бөтөнләйгә. *Ерҙе мәңгегә һатыу. Мәңгегә ауылда ҡалыу.* ■ *Ай был төндө икенсе көндө оноҡҡандыр, бәлки, мәңгегә.* Ғ. Сәләм.

**МӘҢГЕЛЕК** *и.* **1.** Сикһеҙ дауам иткән ваҡыт. *Беҙ теләгән тәмле мәңгелекте тау-тау алтынға ла һатмайҙар.* Ғ. Хәйри.

**2.** *с. мәғ.* Мәңге дауам иткән, мәңге бар булған; ғүмерлек. *Мәңгелек дан. Мәңгелек дуҫ. Мәңгелек хәрәкәт.* ■ *Ғүмер ҡыҫҡа, тормош мәңгелек.* Д. Исламов. **Мәңгелек ут** көрәш ҡорбандары иҫтәлеген мәңгеләштереү өсөн һалынған һәйкәл янындағы һүндерелмәй тотолған ут. *Баҡсаның эсендә революция ветерандары хөрмәтенә мәңгелек ут ҡабыҙылған. Көндөҙ ҙә, төндә лә уның ялҡыны, тере йөрәк һымаҡ, туҡтауһыҙ талпына.* З. Рафиҡов.

**МӘҢГЕЛЕККӘ** *р.* Сикһеҙ ваҡытҡа, ғүмерлеккә; мәңгегә.— *Туташкайым, Нәфисәм, хәҙер инде йөҙөгөбөҙ менән мәңгелеккә хушлашығыҙ.* С. Агиш.

**МӘҢГЕЛӘШТЕРЕЛЕҮ** *ҡ. төш. ҡар.* **мәңгеләштереү.** *Бөйөк Ватан һуғышы батырҙары тарихта мәңгеләштерелгән.*

**МӘҢГЕЛӘШТЕРЕҮ** *ҡ.* Мәңгелек итеү, мәңге онотолмаҫлыҡ итеү. *Батырҙар иҫтәлеген мәңгеләштереү. Күренекле кешеләр исемен мәңгеләштереү.*

**МӘҢГЕРӘҮ** *ҡ. диал.* Миңрәүләнеү.

**МӘҢГЕШ** *и. диал.* Иңкеш. *Мәңгеш ояһы.*

**МӘҢКЕ** *и.* **1.** Серәкәйҙең ҡыш күл төбөндә була торған ҡып-ҡыҙыл ҡорто (ҡармаҡҡа ем ителә).

**2.** *күсм.* Тамсы һымаҡ ҡына итеп ҡармаҡҡа ҡуша ҡурғаштан ҡойолған ялған ем.

**МӘҢРӘҮ** *с. диал.* Миңрәү. *Мәңрәү булып ҡалыу.*

**МӘРАСИМ** [*ғәр.*] *и. иҫк.* **1.** Йола. *Йыназа уҡыу, кәфенләү, саҙаҡа биреү кеүек дини мәрасимдарҙың береһе лә уның [Сәмиҙең] кәбере өҫтөндә үтәлмәне.* Д. Юлтый.

**2.** Бер ваҡиға уңайы менән башҡарылған тантаналы рәсми йола. *Көньяҡ фронтында булған башҡа ғәскәри частар тарафынан башҡорт ғәскәрен оҙатыу мәрасимы яһала.* Ғ. Ибраһим-Ҡыпсаҡ.

**МӘРГЕ** *и. диал. ҡар.* **моҙға** 1.

**МӘРГӘН** [1] *с.* **1.** Төҙ ата торған. *Мәргән кеше. Мәргән уҡсы. // Мәргән атыу.* ■ *Минең атайым үҙе мәргән атыусы, тәжрибәле һунарсы.* Ә. Зәйнуллин. *Ағиҙелкәйҙәге дүрт өйрәкте бик уҡ мәргән булһаң, ат, егет* (Халыҡ йырынан).

**2.** *и. мәғ.* Төҙ атыусы. *Мәргәндәр ярышы.* ■ *Мәргәндәрҙе таныйлыҡ хәлебеҙ бар, шул сәбәптән сабыр ҡылып тора алманым.* Аҡмулла. *[Беҙҙең һалдаттар:] — Бына мәргәндәр! Үҙ кешеләрен ҡыралар, тип һүгенәләр.* Д. Юлтый.

♦ **Мәргән туп** *ҡар.* **туп** [1].

● *Күп атҡан менән кеше мәргән булмаҫ.* Мәҡәл. *Сәсән күрке һүҙ булыр, мәргән күрке күҙ булыр.* Мәҡәл.

**МӘРГӘН** [2] *и. диал. ҡар.* **сысҡансыҡ** [1].

**МӘРГӘНЛЕК** *и.* Мәргән [1] булыу. *[Һәүбән хаҡында Айһылыу:] Мәргәнлектә бер егет — алтын өйрәк атҡан ул* С. Мифтахов. *Сура батыр ир ине, тоҫҡап атһа яҙлыҡмаҫ, мәргәнлектә бер ине.* М. Буранғолов.

● *Мәрәйлектә — мәргәнлек ирке, мәргәнлектә — егетлек күрке.* Әйтем. *Батырлыҡ-яуҙа, мәргәнлек ауҙа беленер.* Әйтем.

**МӘРД** [*фарс.*] *и. иҫк.* Ҡыйыу, батыр ир; ысын ир.

**МӘРДАН** *и. иҫк. кит.* Мәрд.

**МӘРҘӘН** [*фарс.*] *и.* Ир егет, аҫыл ир тигән мәғәнәлә хуплап әйтелә.— *Һай, мәрҙән!.. Бабайың әйттеме һүҙҙе!* Б. Бикбай.

**МӘРҘӘС** [*фарс.*] *ы.* Хуплағанды, ҡеүәтләгәнде белдерә. *Батырсар был хәлгә хайран ҡалып: «Һай, мәрҙәс!» — тип ҡысҡырып ебәрә* (Әкиәттән).

**МӘРЕ** *с. диал.* Епшек. *Мәре ҡар.*

**МӘРЕТКЕ** *с. диал.* Аяҡ аҫты епшек булған. *Мәретке көн.*

**МӘРЕҮ** [1] *ҡ. диал.* Йомшарыу, епшеү. *Мәрегән ҡар.*

**МӘРЕҮ** [2] *с. диал.* Епшек. *Мәреү ҡар.*

**МӘРЕҮ** [3] *и. диал.* Оҫол. *Һулаҡай ҡулдың мәреүе юҡ.*

**МӘРЖЕНКӘЙ: мәрженкәй өйрәк** *диал.* мәрйенкүҙ.

**МӘРЖӘҒ** [*ғәр.*] *и. иҫк. кит.* Ҡайтыр ер. *Дәрмәнд Аҡмуллағыҙ донъяла хур булһа, булһын, мәржәғы нар булмаһын.* Аҡмулла.

**МӘРЗИӘ** [*ғәр.*] *и. иҫк. кит.* **1.** Ризалыҡ, ҡәнәғәтлек. *Әхлаҡыбыҙ — мәрзиәне артҡа ташлап, мәхсүдте хаҡаратлап күңел баҫыу.* Аҡмулла.

**2.** (*баш хәреф менән*) Ҡатын-ҡыҙ исеме.

**МӘРИЗ** [*ғәр.*] *с. иҫк. кит.* Ауырыу, сирле. *Дарыуҙы күтәрә алмаҫ бәғзе мәриз.* Аҡмулла.

**МӘРИХ** (*баш хәреф менән*) *и. иҫк. астр.* Ҡояш системаһында ҡояштан дүртенсе торған ҡыҙғылт төҫтәге планета; Марс.

**МӘРЙЕН** [*ғәр.*] *и.* **1.** Төркөм-төркөм булып ҡаяларға йәбешеп хәрәкәтһеҙ торған, полиптар төрөнә ингән диңгеҙ йәнлеге. *Мәрйен колониялары.*

**2.** Ҡайһы бер диңгеҙ йәнлектәренең ҡалдығынан эзбиз утырмалары рәүешендә барлыҡҡа килгән асыҡ ҡыҙыл, ал, аҡ төҫтәге таш (эшкәртеп биҙәү әйберҙәре яһайҙар). *Сын мәрйен. Ҡыҙыл мәрйен.* ■ *Кесе ҡатынының урҙалағы ҡыҙыл соға әҙепле еләне, мәрйендән генә бөткән селтәре, ҡашмауы, йөн, ебәк кулдәктәре, төрлө-төрлө шәл-яулыҡтары былай ҙа бай йорттоң эсенә йәм биреп тора.* Ғ. Дәүләтшин. / Шул таштың эшкәртелгән бер бөртөгө. *Ваҡ мәрйен. Мәрйен баҫыу. Мәрйен теҙеү.* ■ *Ағиҙелкәй буйы ҡырсын таш, көмөш кенә йөҙөк, мәрйен ҡаш* (Халыҡ йырынан).

**3.** Шул таштың эшкәртелгән бөртөктәрен теҙеп яһаған муйынсаҡ. *Муйындағы мәрйенемде өҙөлһә лә теҙмәгеҙ* (Халыҡ йырынан).

♦ **Мәрйен ағасы** *диал.* осҡат. **Мәрйен яға** *диал.* әмәйлек.

**МӘРЙЕНКҮҘ** *и.* Көрәнһыу башлы, аҡ бауырлы, аҡ күҙле ваҡ өйрәк.

**МӘРЙӘ** [*рус.*] *и. һөйл.* Урыҫ ҡатын-ҡыҙы. *Ғәлиәнең атаһы — башҡорт, әсәһе — мәрйә. Әсәһе уны Галя .. тип йөрөтә.* И. Ғиззәтуллин.

♦ **Мәрйә сәсе** *диал.* ҡылған.

**МӘРЙӘМАНА** *и.* Йомро ҡара емеш бирә торған ҡамыш һымаҡ гөл.

**МӘРКЕ** *и.* **1.** Ҡабыҡтан йәки талдан үргән ҡорот һауыты. *Аҫылбикә .. мәрке тултырып ҡорот йыйҙы.* Ғ. Ибраһимов.

**2.** Эйәргә артып йөк йөрөтөү өсөн ҡабыҡтан, туҙҙан яһалған 1,5—2 бот нәмә һыйышлы һауыт. *Бабсаҡты ҡыпсаҡ еренән мәрке менән тупраҡ ташып күмәләр.* «Бабсаҡ менән Күсәк».

♦ **Мәрке баш** *һөйл.* ҙур баш, бүкән баш.

**МӘРКЕҮ** *к. диал. ҡар.* **епшеү** [1].

**МӘРКӘЗ** [*ғәр.*] *и. ҡар. иҫк. кит.* **1.** Ниҙең дә булһа урта төшө; үҙәк. *Ауылдың мәркәзе. Ҡаланың мәркәзе. // Мәркәз урын.* ■ *Бихисап ҙур бер шәһәргә керҙеләр, дыу килеп мәркәз урамдан йөрөнөләр.* Ш. Бабич.

**2.** Идара үҙәге урынлашҡан, промышленносҡа бәйле учреждениелар, культура йорто һ. б. булған ҡала йәки ҙур ауыл; үҙәк, башҡала. *Район мәркәзе.* ■ *Бына Стәрле — йөмһүриәттең мәркәзе. Бында тормош Темәскә ҡарағанда башҡа-сараҡ, сөнки мәркәз бит.* Ш. Хоҙайбирҙин. *Көньяҡтан Деникин .. армияһы ил мәркәзе Мәскәүҙе баҫып алыу өсөн ябырылып килә.* Ф. Иҫәнғолов.

**3.** Берәй эш менән идаралыҡ иткән юғары орган. *Хужалыҡ мәркәзе. Волость мәркәзе идараһы.* ■ *Волость башҡарма комитет мине мәркәзгә Халыҡ хужалығы советына ебәрҙе.* Ғ. Хәйри. / Ҡайһы бер учреждение, бүлек атамаһы составында ҡулланыла. *Мәркәз ауыл хужалығы банкы. Мәркәз урман идараһы.* ■ *Был эшкә Мәркәз милли шуранан килгән вәкил Садри Маҡсудов та ҡатнаша.* З. Шәрҡи.

♦ **Ғилми мәркәз** егерменсе йылдарҙа Башҡортостандағы бөтә ғилми эште берләштергән ойошма.

**МӘРКӘЗЛӘШЕРЕЛЕҮ** *к. иҫк. төш. ҡар.* **мәркәзләштереү.** *Орлоктар мәркәзләшерелгән, сауҙа һәм сәнғәт ойошмаларынан договор буйынса алына.* Ғ. Ғисмәти.

**МӘРКӘЗЛӘШТЕРЕҮ** *к. иҫк.* Бер үҙәккә, бер ергә туплау; үҙәкләштереү. *[Аҙыҡ комиссариаты] халыҡ өсөн кәрәк булған нәмәләрҙе мәркәзләштереп, халыҡҡа таратты.* «Совет Башҡортостанының ун йылы», 1929.

**МӘРҠӘД** [*ғәр.*] *и. иҫк. кит.* Ҡәбер. *Я,Мөхәммәт, ҡыл шәфәғәт, мәрҡәдеңдән тор терел.* Ш. Бабич.

**МӘРҠУМ** [*ғәр.*] *с. иҫк. кит.* Яҙылған йәки әйтелгән. *Мәрҡум хәбәр.*

**МӘРМӘР** [*ғәр.*] *и.* Скульптура һәм архитектура эштәрендә ҡулланыла торған төрлө төҫтәге кристаллик таш. *Аҡ мәрмәр. Ҡыҙыл мәрмәр. // Мәрмәр һәйкәл. Мәрмәр скульптура.*

**МӘРСЕН** [1] *и.* **1.** Ҡыҫҡараҡ моронло, буй-буй теҙелгән ҡабырсаҡ тәңкәле ыуылдырығы һәм ите бик затлы эре балыҡ; бикре. *Мәрсен ыуылдырығы. Мәрсен консерваһы.*

**2. Мәрсендәр, мәрсен һымаҡтар** *зоол.* Бикре, ҡырпа, сөгә, уҡбаш һ. б. ингән балыҡтар ғаиләһе.

**МӘРСЕН** [2] [*ғәр.*] *и. ҡар.* **мирт** 1.

**МӘРҪИӘ** [*ғәр.*] *и. иҫк.* Берәүҙең үлеүе айҡанлы яҙылған ҡайғы шиғыры. *Ахыр ғүмер мәңге өҫтөгөҙҙә мәрсиәләр көйләп торормон.* Ш. Бабич.

**МӘРТ** [*ғәр.*] *с.* Оҙаҡ ваҡыт, бер ни белмәй, тәрән йоҡоға талған һымаҡ хәрәкәтһеҙ ятҡан хәл; летаргия. **Мәрткә китеү (*йәки* барыу)** летаргик йоҡо менән уянмай йоҡлау. *Ҡарттар менән хәҙрәт мәрткә киткән. Ҡарға күнгән мәсет башына ..* Ғ. Хәйри.— *Әй, һеҙ, әллә мәрткә киттегеҙме, йоҡо сумарҙары, төш етеп килә бит инде! — тип Шамуҡ карт лейтенанттарҙы уят[ты].* Д. Исламов. **Мәрттән ҡайтыу** летаргик йоҡонан уяныу.

● *Мәрткә киткән ҡайта, үлгән ҡайтмай.* Әйтем.

**МӘРТӘБӘ** [1] [*ғәр.*] *и.* Тапҡыр, ҡат. *Бер мәртәбә. Ике мәртәбә.* ■ *Һин йәшәгән өйҙө табырмын, .. өс мәртәбә тәҙрә ҡағырмын.* Б. Рафиҡов.

**МӘРТӘБӘ** [2] [*ғәр.*] *и.* **1.** Хеҙмәттәге урын, рәсми дәрәжә. *Ҡыдырҙың мәртәбәһе билгеле үк — оло мансаб ғанҡаһы, үҙе кантон һәм майор.* «Башҡорт шәжәрәләре», 1960.

**2.** Дәрәжә, яҡшы исем, абруй. *[Байғужалар] үҙ мәртәбәләрен белеп, мыйыҡ аҫтынан ғына йылмайып ҡуялар.* Я. Вәлиев. *Балалар әҙәбиәтенә мәртәбә өҫтәрҙәй ижад кеүәһе .. кәрәк.* «Ағиҙел», 1969, № 1. / Өҫтөнлөк биргән маҡтаулы, яҡшы эш. *Өмәгә һайлап ҡына саҡыралар. Унда эләгеү мәртәбәгә һанала.* М. Кәрим. *Ашап-эсеүҙәре бер ни түгел, ошо ултырыуҙары мәртәбә* (Халыҡ йырынан).

● *Мәртәбәң бейек булһа, йортоң алыҫтан күренә.* Мәҡәл.

**МӘРТӘБӘЛЕ** *с.* **1.** Ҙур рәсми дәрәжәле. *Мәртәбәле кеше.*

**2.** Абруйлы, дәрәжәле. *Гел эш, гел уҡыу менән мәшғүл ире Вәкил күҙ алдына килде. Ниңә ошо инженер кеүек мәһабәт һәм мәртәбәле түгел икән?* Х. Зарипов.

**МӘРҮӘР** [1] [*фарс.*] *и. диал. ҡар.* **мәрүәт** 1.

**2.** Мәрмәр.

**3.** (*баш хәреф менән*) Ир-ат исеме.

**МӘРҮӘР** [2] *и.* Айыу баланы һымаҡтар ғаиләһенә ҡараған йыуан кәүшәк үҙәкле, ваҡ ҡына ҡушар-ҡушар ҡыҙыл емешле туғай ҡыуағы; осҡат. *Мәрүәр ағасы. Мәрүәр емеше.*

**МӘРҮӘТ** [*фарс.*] *и.* **1.** *иҫк.* Диңгеҙ ҡабырсағының эсендә була торған аҡ, һарғылт, алһыу төҫтәге йоп-йомро аҫыл таш; ынйы. *Мәрүәт тешкәйҙәрен ялтыратып ҡыҫып алды көмөш ҡумыҙҙы.* Х. Ғәбитов.

**2.** Ҡайһы бер әкәм-төкәм ҡабырсаҡтарының ялтырауыҡлы эске яҡ ҡатламы (төрлө биҙәү әйберҙәре, һиҙәп һ. б. яһау өсөн ҡулланыла); перламутр. *Һарғылт мәрүәт. Мәрүәт менән биҙәү. // Мәрүәт һиҙәп. Мәрүәт төймә.*

**3.** *диал.* Бесәй табаны (*кар.* **бесәй**). *Мәрүәт япрағы.*

**МӘРХҮМ** [*ғәр.*] *и.* Үлгән ир кеше (ғәҙәттә уны телгә алғанда әйтелә). *Мәрхүмде иҫкә алыу кисәһе. // Мәрхүм кеше.* ■ *Бит мәрхүмдәр өсөн түгел, тормош тере кеше өсөн ҡорола.* Р. Сафин. *Һылыу ҡортка карты мәрхүм бар сакта уҡ еңмеш булып өйрәнгән.* Т. Йәнәби. *Сәйер кеше ине мәрхүм, бер ҙә юҡҡа тулар ине.* Н. Нәжми.

□ **Мәрхүм булыу** вафат булыу, үлеү. *Бына минең күрше Айбулат ҡусты мәрхүм булып ҡалды. Шуны бөгөн ерләргә кәрәк ине.* Һ. Дәүләтшина.

**МӘРХҮМӘ** [*ғәр.*] *и.* Үлгән ҡатын-ҡыҙ (ғәҙәттә уны телгә алғанда әйтелә). *[Йәнгәле:] Зөлхиҙә мәрхүмә, урыны йәннәттә булһын, утты-һыуҙы үтеп сыҡкан сая бер бисә ине.* С. Агиш.

**МӘРХӘБӘ** [*ғәр.*] *ымл. иҫк.* **1.** Кемдеңдер килеүен, нимәнеңдер булыуын хуплағанды белдерә; әйҙүк. *Донья ахирәт булһын, тиһәк, йөҙөбөҙ аҡ, һәр кеше: «Мәрхәбә!» — тип ҡабул итер.* М. Ғафури.

**2.** (*баш хәреф менән*) Ҡатын-ҡыҙ исеме.

**МӘРХӘМӘТ** [*ғәр.*] *и.* Яҡшылыҡ, рәхимлек; шәфҡәт. *Мәрхәмәт күрһәтеү. Мәрхәмәт һорау.* ■ *— Йә инде, күкрәк һөтөңдө биреп үҫтергән балаң үҙеңә ҡаршы һүҙ күтәрһенсе.. Шулай булғас, башҡа ят кешенән ниндәй мәрхәмәт көтмәк кәрәк.* Ш. Насыров. *Йәшләй йәтим үҫтем, ата йөҙөн, әсә мәрхәмәтен күрмәнем.* Ғ. Амантай.

□ **Мәрхәмәт итеү** (*йәки* **ҡылыу**) ҡыҙғанып, рәхимлек күрһәтеү, яҡшылыҡ эшләү, аяу. *Мин дә һине хөрмәт итәм, мәрхәмәт ит, һинән һорай мәжрух йөрәк, мөрһим туташ.* Ш. Бабич.

♦ **Мәрхәмәт ҡағыҙы** *тар.* бола йәки һуғыштан һуң еңелгән халыҡҡа ғәфү һәм шәфҡәт белдереп яҙылған рәсми мөрәжәғәт.

**МӘРХӘМӘТЛЕ** *с.* **1.** Кешегә ҡарата йомшаҡ, яҡшы күңелле; рәхимле, шәфҡәтле. *Мәрхәмәтле кеше. Мәрхәмәтле булыу.* ■ *Ғүмерем юлдарында Тыуған илдәй мәрхәмәтле әсә тапманым.* Б. Вәлит.

**2.** Кешегә түбәнселек һәм ихтирам менән өндәшкәндә әйтелә. *Рәхмәт һеҙгә, мәрхәмәтле тупраҡ, Сәрмәсәндең тоноҡ һыуҙары.* М. Кәрим.

**МӘРХӘМӘТЛЕК** *и.* Кешегә ҡарата булған яҡшылыҡ; мәрхәмәтле булыу сифаты. *Мәрхәмәтлек күрһәтеү.* ■ *Эй утындар! Күпме мәрхәмәтлек һеҙҙең утта, һеҙҙең ялҡында! Һеҙ үҙегеҙ янып, кешеләрҙе йылытаһығыҙ бит һалҡында.* Н. Нәжми.

**МӘРХӘМӘТҺЕҘ** *с.* Рәхимһеҙ, шәфҡәтһеҙ. *Мәрхәмәтһеҙ булыу.* ■ *Эҙ ҡалдырҙы зәгиф тәндәрендә мәрхәмәтһеҙ байҙар ҡамсыһы.* Х. Ғәбитов.

**МӘРХӘМӘТҺЕҘЛЕК** *и.* Кешегә ҡарата булған рәхимһеҙлек, мәрхәмәтһеҙ булыу сифаты. *Мәрхәмәтһеҙлек күрһәтеү.* ■ *Асанбайҙың оятһыҙлығы, мәрхәмәтһеҙлегe крәҫтиәндәрҙең электән тулышып килгән асыуын тағы ла ҡабарта төшә.* И. Кинйәбулатов.

**МӘРҺӘМ** [*ғәр.*] *и. иҫк.* Яраға һөртә торған дарыулы май. *Мәрһәм һөртөү.*

**МӘРӘЙ** *и.* **1.** Төҙәп атҡан нәмә; сәп. *Мәрәйгә атыу. Мәрәйгә тейҙереү.* ■ *Соҡор ауылы янындағы һырған күл тигән мәшһүр урын — Иҫән хан менән Суртмаҡ хандың мәрәйгә атышҡан урыны.* «Башҡорт шәжәрәләре», 1960.

**2.** Атыу ярышы, уйыны. *Ир балалар мәрәй уйнай.*

**3.** Ярыш уйындарындағы отошто һанау бермеге. *Мәрәй һалыу.* ■ *[Миңнуш:] Онотма, уларҙың һәр береһе өсөн беҙҙең отряд икешәр мәрәй ала.* Ш. Бикҡол.

**МӘРӘЙЛЕК** *и.* Ҡулдан атыу ҡоралының ҡарауыл [2] аша сәпкә туралап тоҫҡай торған киртекле ҡулайламаһы.

● *Мәрәйлектә — мәргәнлек ирке, мәргәнлектә — егетлек күрке.* Әйтем.

**МӘРӘКӘ** I *и.* **1.** Көлкө килтергес эш-хәл, ҡыҙыҡлы күренеш. *Мәрәкә табыу.* ■ *Мәрәкәгә әүәҫ малайҙар.. туйғанса өймәкләшеп, танау ҡанатышып тарала.* Ф. Иҫәнғолов.

**2.** Уйынсалап әйтелгән көлкө килтергес һүҙ, көлкөлө хәбәр. *Мин эшләшеп йөрөгән булып, төрлө мәрәкәләр тыңлайым.* А. Ғирфанов.

II *с.* **1.** Көлкө килтергес; ҡыҙыҡ. *Мәрәкә һүҙ. Мәрәкә булыу. Мәрәкә итеү. Мәрәкә күреү.* ■ *— Эй, ҡалай мәрәкә! Ҡарағыҙ әле, уҡытыусы апайға сабата ҡалай килешеп тора.* М. Тажи.

**2.** Күңел әүрәткес; ирмәк, ҡыҙыҡ. *Ауылда театр килеп, бер мәрәкә булып ҡалды.*

**3.** Ҡылығы, ҡыланышы үҙенә бер төрлө мәҙәк булған; ҡыҙыҡ. *Мәрәкә кеше.* ■ *Ҡала балаһы мәрәкә лә инде: һаҡалдан тотоп ҡарайҙар, түбәтәйҙе систереп кейәләр.* Р. Низамов.

**МӘРӘКӘЛӘҮ** *ҡ.* Шаяртып, уйынсалап әйтеү, көлкөгә бороп һөйләү. *Мәрәкәләп һөйләшеү.* ■ *Вәлиулла атҡа менеп йөрөрлөк, Зөлхизә көйәнтәләп һыуға барырлыҡ булғансы, уларҙың береһен кейәү, береһен килен тип, мәрәкәләй торған булғандар.* М. Буранғолов.

**МӘРӘКӘЛӘШЕҮ** *ҡ.* Үҙ-ара бер-береңде мәрәкәләү. *Мәрәкәләшеп ултырыу.* ■ *Мәрәкәләшеү, төрткөләшеү, төрлө әңгәмә араһында беренсе һыуһындың үтеп киткәне беленмәй ҙә ҡалды.* Ғ. Дәүләтшин.

**МӘРӘКӘСЕ** *и.* Шаян һүҙҙәр һөйләргә ятыусы, ҡыҙыҡ һүҙ оҫтаһы. *Мәрәкәсенең һүҙенә кеше һыны ҡатып көлә, ә үҙе йылмайып та ҡарамай.* Р. Бикбаев.

**МӘРӘКӘСЕЛ** *с.* Шаян һүҙгә, мәрәкә һүҙгә әүәҫ. *Мәрәкәсел кеше. Мәрәкәсел булыу.*

**МӘС** *и.* Ҡымыҙ, ҡатыҡ өсөн тиренән тегелгән һауыт. *Мәс тегеү.* ■ *Айран яҙып, май таҫҡап, бары мәскә һалынды.* М. Буранғолов.

**МӘСАРИФ** [*ғәр.*] *и. иҫк. кит.* Тотолған аҡса; сығым. *Уҡыу-уҡытыу мәсарифы.*

**МӘСАФӘ** [*ғәр.*] *и. иҫк. кит.* Ике аралағы алыҫлыҡ. *Ҡайһы юл менән ҡайтһам да мәсафә бер миҡдарҙа булғанға күрә, мин һүҙһеҙ риза булып, сығып киттем.* М. Ғафури.

**МӘСБУҠ** [*ғәр.*] *с. иҫк.* Һабаҡ алыусы. *[Миф-тах:] Бөгөн мәсбуҡтарға күстәнәс тапшыра торған көн. Уларға яҡындары һәм дуҫтары килер, күстәнәс, йылы һүҙ, күҙ йәше ҡалдырып китер.* К. Мәргән.

**МӘСҒҮД** [*ғәр.*] *с. иҫк. кит.* **1.** Рәхәтлек кисергән, бәхетле. *Мәсғүд баласаҡ.* ■ *Ана, ел сәскә-гөлдәрҙе һөйөп экрен генә иҫте, иректе, мәсғүд*

ләрҙе сәләмләп таң менән кисте. Б. Мирзанов. / Һөйөклө гөлдәрем араһында мәсгүд үтә минең ...өндәрем. М. Фәйзи.

**2.** (*баш хәреф менән*) Ир-ат исеме.

**МӘСҒҮДИӘТ** [*ғәр.*] *и. иҫк. кит.* Бәхет, рә...әтлек. *Мәсгүдиәт кисереү.* ■ *Йөрәгеңде таш...а әйләндергән ауыр газаптар, башты сыуалт...ан ҙур борсоуҙар көҙрәт кулы менән алып таш...ана, тәрән мәсгүдиәт эсенә сумаһың.* Ғ. Ибра...имов.

**МӘСЕ** *и. диал. кар.* **мәрәй 1.**

**МӘСЕЛЕЙ** *и. диал.* Бәләкәй сурағай; зыйтым.

**МӘСЕМ** *с. диал. кар.* **мәскәй 1.**

**МӘСЕН** *и. иҫк. кар.* **мәүсим.** *Яҙгы ла гына кил...эн ас кәкүк сакыра ла мәсен менән мәүлен ба...ында* (Халыҡ йырынан).

**МӘСЕТ** [*ғәр.*] *и.* Мосолмандарҙың йыйылып ...амаҙ уҡый торған махсус йорто. *Таш мәсет. ...әсет манараһы. Мәсет мөнбәре. Мәсеткә ба...ыу.* ■ *Байҙар мәсеткә йыйылып, йома намаҙын ...кырга гына башлаганда, Алтынкойрок-Кө...өшъял бер кешнәп ебәрҙе* (Әкиәттән).

**МӘСИН** *и.* Маймыл.

◆ **Мәсин йылы** *диал.* маймыл йылы (*кар.* **...аймыл**).

● *Каргы карсыганың аҙганы, мәсин — кеше...ең аҙганы.* Әйтем.

**МӘСИХ** [*ғәр.*] *и. иҫк.* Дини ҡағиҙә буйынса, ...әһәрәт алғанда еүеш ҡул менән баш, ҡолаҡ, ...уйынды, намаҙ алдынан өс бармаҡ менән ситек ...өҙөн һыйпап ирешелгән «таҙалыҡ». *Ситеккә ...әсих тартыу. Мәсихте боҙоу.*

**МӘСКҮН** [*ғәр.*] *с. иҫк. кит.* Кеше йәшәгән; ...ешеле. *Мәскүн ер.* ■ *[Хәҙрәт:] Һеҙ, мулла Вә...сит, рөбгөө мәскүндең күп ерҙәрен күреп кайт...ыгыҙ.. Йөрөгән ерҙәрегеҙҙә көнкүрештәр ни...ек?* М. Ғафури.

**МӘСКӘЙ** *и.* **1.** (*йәки* **мәскәй әбей**) Дини хөрә...фәтсә: төрлө һүрәткә инә алған, яуыз тәбиғәтле, ...ихырсы ҡатын-ҡыҙ заты. *[Сыуакай әбей] әллә ...индәй ен һуккан, мәскәй әбей арбаган, бисура ...йәләшкән кешеләр тураһында, береһенән бере...е куркыныcырак һүҙҙәр һөйләне.* З. Биишева. *...орон заманда аҙмаганды аҙҙырып, туҙмаганды ...уҙҙырып йөрөгән бер Мәскәй булган, ти* (Әки...әттән).

**2.** Туя белмәҫ кеше, убыр.

**3.** Балалар уйыны (түңәрәк яһап ултыралар; ...раларынан Мәскәй әбей менән Инәй һайлап ...уялар; «Оло мөрйәгеҙҙән инеп, кесе мөрйәгеҙ...ән алып сығырмын»,— тип Мәскәй әбей бала...арҙы берәм-берәм алып китергә, инәй бирмәҫкә ...ырыша).

**МӘСКӘН** [*ғәр.*] *и. иҫк. кит.* Торған урын; тор...аҡ, өй. *Ғабдулланың хәҙер Ҡазанда мәскәне.* Ш. Бабич.

**МӘСКӘҮ** [1] *и.* Сурағай, шамбы, бәрҙе кеүек, ...ер урында ҡуҙғалмай ята торған балыҡтарҙы ...отоу өсөн ҡылдан йәки йомшаҡ тимерсыбыҡтан ...һалған бәләкәс кенә ҡорок. *Мәскәү менән то...оу.* ■ *Түбәндә, яр аҫтында ята сурагай. Мәс...кәүен һуҙып яй гына ынтылды агай.* Ш. Бикҡо...ов.

**МӘСКӘҮ** [2] *и.* Ҡатын-ҡыҙҙың күлдәк итәгенә ...ратып баҫҡан тар буй; ҡатмар, итәк.

**МӘСКӘҮЛЕ** *с.* Мәскәү һалып тегелгән. *Мәскәүле күлдәк. Мәскәүле итеү.*

**МӘСКӘҮЛӘҮ** [1] *к.* Мәскәү [1] менән тотоу. *Балык мәскәүләү.* ■ *Шаян шаршы бәрҙеләрен үҙем мәскәүләп алган Куксә йылгаһы.. иҫкә төштө.* Н. Мусин.

**МӘСКӘҮЛӘҮ** [2] *к.* Мәскәү [2] һалыу, мәскәүле итеү. *Күлдәкте мәскәүләп тегеү.*

**МӘСЛИХӘТ** [1] [*ғәр.*] *с.* Эш-хәл файҙаһына ярашлы, ҡулай булған; урынлы. *Мәслихәт эш. Мәслихәт булыу. Мәслихәт күреү.* ■ *— Мәүлет корҙаштың Килдебайҙы зилский яһарга кәрәк тигәне бик дөрөҫ. Ул ике ауылга билдәле кеше, эште уйлап эшләй торган кеше. Хәҙер унан да мәслихәт кеше табыу кыйын булыр.* Ғ. Дәүләтшин.— *Йәл түгелме колхоз? Ташлап китеү шулай тейешме? Мәслихәтме икән быңдай хәлдәр? Килешәме былай?* Х. Кәрим. / Кемде йәки ниҙеләр хуп күреп, ҡеүәтләгәндә әйтелә. *[Халык:] Быныһы яраган! Быныһы мәслихәт!* К. Мәргән.

**МӘСЛИХӘТ** [2] [*ғәр.*] *и.* Уртаҡ бер уңай фекергә килеү өсөн һөйләшкән һүҙ; кәңәш. *[Ғилметдин:] Мансурҙы хата юлга индермәҫкә ни кәҙәр тырыштым. Ләкин уны үҙҙәренә ауҙарып алган кешеләр минең мәслихәтемә ихтыяр бирмәне.* Ғ. Ныязбаев. *Ыласын кеүек кенә ир булһаң да, мәслихәтһеҙ эштәр ярамай* (Халыҡ йырынан). **Мәслихәткә инеү** кем менәндер кәңәшләшеү. **Мәслихәт менән** яҡшылап, кәңәш итеп. *Катырак бәрелгәндәй булдым мин уга, иплэп, мәслихәт менән һөйләшкәндә.. күндереп булыр уны.* И. Ниғмәтуллин.

□ **Мәслихәт итеү** (*йәки* **итешеү, ҡылыу, ҡылышыу**) кәңәшләшеү. *[Мәсем хан] халкымды шул бәләнән коткарыгыҙ, тип батырҙарга мәслихәт кылган.* «Бабсаҡ менән Күсәк».

**МӘСЛИХӘТЛЕ** *с.* Кәңәшләшеп эшләнгән. *Мәслихәтле эш. Мәслихәтле булыу.*

**МӘСЛИХӘТЛӘШЕҮ** *к. һөйл.* Кәңәш итешеү; кәңәшләшеү.— *Беҙҙең ауыл Мәүлетбай агай менән мәслихәтләшеп, бер төрлө һүҙ төйнәгәйне инде.* Ғ. Дәүләтшин.

**МӘСЛӘК** [*ғәр.*] *и. иҫк. кит.* Тоткан юл; принцип. *Сәйәси мәсләк.* ■ *«Вакыт» редакторы булган Ямалетдин Вәлиди оҙон-оҙон мәкәләләр яҙып большевиктарҙы һүгә, партияның тарихын, мәсләген кара фекерҙәр менән буташтыра.* З. Шәрҡи.

**МӘСЛӘКТӘШ** *и. иҫк. кит.* Ҡарашы, фекере, тоткан юлы уртаҡ кеше; фекерҙәш.— *Ғәзиз мәсләктәштәрем, шәкерттәр! Россияның хәлдәренә гибрәт менән күҙ һалһагыҙ, замананың ни кәҙәре әһәмиәтле бер заман икәнен белерһегеҙ.* М. Ғафури.

**МӘСНӘҮИ** [*ғәр.*] *и.* **1.** *кит.* Көнсығыш халыҡтары әҙәбиәтендә: ике юлы бер рәттән рифма менән берләштерелгән шиғыр. *М. Ғафуриҙың күпселек шигырҙары мәснәуи формаһында яҙылган.* К. Әхмәтйәнов.

**2.** (*баш хәреф менән*) Ир-ат исеме.

**МӘСТ** [*фарс.*] *с. иҫк. кит.* Иҫерек, иҫергән. *Мәст кеше. Мәст булыу.* ■ *Кулына кай яманның төшһә гәүһәр, булалыр шул яманга мәстән артык.* Аҡмулла.

**МӘСТӘК** *и.* Ябай эш аты. *Мәстәк егеү.* ■ *Мәстәктән тыуған ҡолон толпар булмаç, ябалаҡтың балаһы шоңҡар булмаç.* Аҡмулла.

**МӘСҮН** [*ғәр.*] *с. иçк. кит.* Һаҡланған, имен.

□ **Мәсүн әйләү** һаҡлау.

**МӘСҮӘК** *и. диал.* Тубылғы.

**МӘСХУР** [*ғәр.*] *с. иçк.* **1.** Сихырланған, сихыр көсө тәьçирендә булған.

**2.** *күсм.* Бөтә уй-фекере, күңеле арбалған. *Азатлыҡҡа сығара торған һуҙҙәрҙе тыңларға әҙерләнгән кешеләр кеүек мәсхур булып, һелкенмәй-нитмәй ниҙер көтәләр.* М. Ғафури.

**МӘСХӘРӘ** [*ғәр.*] *и.* Йөҙҙө ҡарайтҡан хурлыҡлы хәл; хурлыҡ, мыçҡыл. *Төрлө мәсхәрәләр күреү. Мәсхәрәгә түҙмәү.* Әҙәм мәсхәрәһе яман хурлыҡ, ҙур оят.— *Килеп алһындар, гонаһына батып, әҙәм мәсхәрәһендә ултырыр хәлебеҙ юҡ.* Һ. Дәүләтшина.

□ **Мәсхәрә булыу** *йәки* **мәсхәрәгә ҡалыу** хурлыҡҡа ҡалыу, хурлыҡ кисереү, оятлы булыу. *Әйләр хандың гәскәре .. тар-мар булып юғалып, мәсхәрәгә калып, таркалып бөттө, ти* (Әкиәттән). **Мәсхәрә итеү** 1) хурлау, мәсхәрәләү, мыçҡыл итеү; *Усман бай Әхмәҙиҙе ҡыҙыулыҡ менән, тәпе буры, айыу буры, тип мәсхәрә итте.* Ж. Кейекбаев; 2) көслөк менән енси мөнәсәбәткә мәжбүр итеү; талау, мыçҡыл итеү. *Шәрип ауылына аҡтар килеп тулған. Халыҡты талайҙар, ҡатын-ҡыҙҙы мәсхәрә итәләр.* «Ағиҙел», 1967, № 9.

**МӘСХӘРӘЛЕ** *с.* Мыçҡыллы, хурлыҡлы. *Мәсхәрәле һүҙ.*

**МӘСХӘРӘЛЕК** *и.* Хурлыҡ, мәсхәрә. *Ҡаты мәсхәрәлек ағыу булды йәп-йәш ҡыҙҙың йөрәк итенә.* Р. Ниғмәти.

**МӘСХӘРӘЛӘНЕҮ** *ҡ. төш. ҡар.* **мәсхәрәләү.** *Мин былай туҡмалып, мәсхәрәләнеп йөрөүгә сыҙай алмайым.* Т. Хәйбуллин.

**МӘСХӘРӘЛӘТЕҮ** *ҡ. йөкм. ҡар.* **мәсхәрәләү.** *Яла яҡтырып мәсхәрәләтеү.*

**МӘСХӘРӘЛӘҮ** *ҡ.* **1.** Түбәнһетеп, мыçҡыллап көлөү, хурлау; мәсхәрә итеү. [*Әмирханов:*] *Фәйзуллин иптәштең минең адресыма ташлаған мәсхәрәләүҙәрен протоколға ҡәйет итеүегеҙҙе талап итәм.* С. Агиш.

**2.** Көслөк менән енси мөнәсәбәткә мәжбүр итеү; мыçҡыл итеү. *Нурлы йөҙлө, зифа ҡыҙ-ҡырҡынды мәсхәрәләп киткән бай шаҡшы.* С. Кулибай.

**МӘСЬҮЛ** [*ғәр.*] *с. иçк. кит.* **1.** Ниндәйҙер эш-хәл, уның һөҙөмтәһе өсөн яуап бирергә тейешле, яуаплы. *Мәсьүл булыу.* ■ *Партия комитеты минең өçкә бейек мәсьүл эш йөкмәтте.* Б. Ишемғол. // *Һәр эштә үҙемде мәсьүл һиҙәм, шулай булмаһынса нишләйем?* Х. Ҡунаҡбай.

**2.** Рәсми йәһәттән бурыслы; яуаплы. *Съездың өсөнсө көнөндә мәсьүл хакимдәрҙән бераү Питерҙан ҡайтып, Кронштадт ваҡиғаһы тураһында доклад бирҙе.* Ш. Хоҙайбирҙин. *Ҡоролошта ул мөһим, мәсьүл кеше, гидротехник тиҙәр үҙенә.* Б. Вәлит. / Эш өсөн айырым хоҡуҡлы һәм бурыслы. *Мәсьүл секретарь.* ■ *Ул ваҡытта мәсьүл редактор булып Дауыт Юлтый һаналды.* Т. Йәнәби.

**МӘСЬҮЛИӘТ** [*ғәр.*] *и. иçк. кит.* Эш-хәл өсөн яуап биреү бурысы; яуаплылыҡ. *Мәсьүлиәт алыу. Мәсьүлиәтте күтәреү.* ■ *Һәр взвод коммунистары менән һөйләшеп, мәсьүлиәттәрен аңлатып йөрөнөк.* С. Әлибаев. *Ипләп-иплән ваҡ-төйәкте таҙартмаһаң һиңә оят һиңә төшә мәсьүлиәт.* Ш. Бабич.

**МӘСЬҮЛИӘТЛЕ** *с. ҡар.* **мәсьүл.** *Мәсьүлиәтле эш. Мәсьүлиәтле урын.*

**МӘСЬҮЛЛЕК** *и. ҡар.* **мәсьүлиәт.**

**МӘСЬӘЛӘ** [*ғәр.*] *и.* **1.** Ҡарау, хәл итеүҙе талап иткән нәмә. *Дөйөм мәсьәлә. Мөһим мәсьәлә.* ■ *Дәүләт тормошоноң айырыуса мөһим мәсьәләләре бөтә халыҡ тикшереүенә сығарыла, шулай уҡ бөтә халыҡтың тауыш биреүенә [референдумға] ҡуйыла.* Башҡорт АССР-ының Конституцияһы, 1984. *Беҙҙең илдә милли мәсьәләне хәл итеү нигеҙҙәрен Бөйөк Октябрь революцияһы һалды.* «Совет Башҡортостаны», 1986, 26 февраль. / Фекер алышыу нигеҙендә тикшерелергә, ҡаралырға тейешле нәмә. [*Сыртланов:*] *Көн тәртибендә бер генә мәсьәлә; метр системаһындағы үлсәүҙәргә күсеү тураһындағы доклад.* С. Агиш. / *һөйл.* Ни менәндер бәйле булған, иғтибар үҙәгендә торған нәмә, эш-хәл. *Китеү мәсьәләһен хәл итеү. Йылы кейем мәсьәләһен ҡарау.* ■ *Бешереү мәсьәләһенә килгәндә, һуҙҙе Индрил ала.* Д. Юлтый.

**2.** *мат.* Ниндәйҙер шарттағы билдәле һандар ярҙамында тейешле тәртип буйынса билдәһеҙ һанды табыуға ҡоролған математик һорау. *Алгебраик мәсьәлә. Мәсьәлә сисеү.*

**МӘСӘҒҮТ** *и.* Бер башҡорт ырыуының исеме (тамьяндарға инә).

**МӘСӘЙ** *и. диал.* Һеңер.

**МӘҪӘЛ** [*ғәр.*] *и. әҙ.* Ситләтеп әйтеп өгөт-нәсихәт биреүгә ҡоролған, шиғыр рәүешендә яҙылған бәләкәй күләмле аллегорик әçәр. *Мәҫәл жанры. Мәҫәл яҙыу.* ■ *Төрлө ҡош-ҡорт минең мәҫәлдәрем өсөн маузуғ булды.* М. Ғафури.

**МӘҪӘЛӘН** [*ғәр.*] *инш.* Әйткәнде дәлилләү өсөн миҫал килтергәндә ҡулланыла; миҫал өсөн. — *Их, Тимер, беҙ йәш, артыҡ йәш шул әле, күп нәмәне төшөнөп етмәйбеҙ. Мәҫәлән, мөхәббәт мәсьәләһе .. Беҙҙең өсөн ул — эш, эштә тыуған дуçлыҡ.* Б. Бикбай.

**МӘҪӘРЕҮ** *ҡ. диал. ҡар.* **бәçәреү** 1. *Мәҫәргән бесән.*

**МӘТАҒ** [*ғәр.*] *и. иçк. кит.* Ҡиммәтле, затлы нәмә. *Бирергә булмаһа уның мәтағы, хәласын эстәр булһа ул тағы, алырҙар ул кешенең унда атын..* Һ. Салихов.

**МӘТЕ** *и.* Һылашып торған еүеш балсыҡ; туйын. *Ҡыҙыл мәте. Мәтегә буялыу.* ■ *Урамда ыçмала кеүек йәбешкәк мәте ботинка табандарын ҡуптарып алып ҡала.* Ф. Әсәнов. *Ишектән ингәс тә уң яҡ мөйөштә һоро мәте менән һыланған .. сыуал тора.* Ғ. Әмири.

**МӘТЕЛЕ** *с.* **1.** Мәтеһе булған, мәте ҡатнаш. *Мәтеле урын. Мәтеле тупраҡ.*

**2.** Мәтегә буялған. *Мәтеле итек. Өçтө-башы мәтеле.*

**МӘТЕЛЕК** *и.* Мәтеле урын, мәтеһе булған ер. *Йылғаның уң яғында .. ҡыҙыл мәтелек өçтөндә .. көнсығыштан өргән ел менән ҡутәрелгән саң аçтында тонсоғоп, башҡорт ауылдары ултырғандар.* Ғ. Дәүләтшин.

**МӘТЕЛӘНЕҮ** *к.* Мәтелегә әйләнеү, мәтеле булыу. *Ер күшеккән, ер ҡаңғыра. Мәтеләнгән һалҡын ергә бер баҫырға сирҡандыра.* М. Кәрим.

**МӘТЕН** [*ғәр.*] *и. иҫк. кит.* Яҙма текст. *Мирсәйет .. ахыр ғүмерендә Сажауын тигән күйҙә «Фараиз» мәтененә шәрех яҙҙы.* «Башҡорт шәжәрәләре», 1960.

**МӘТКӘ** [*рус.* Мотька] *и. һөйл.* Рус ҡатын-ҡыҙы. *[Бикә:] Берәй сүкынсыҡ мәткә, ҡыҙыл ауыҙ башын әйләндергән уның.* Ә. Мирзаһитов. / Ҡатын-ҡыҙға әрләп әйтелә. *[Хәжәр — Ғәфүргә:] Шул мәткә өсөн ғүмер иткән күршене рәнйетәһең, оятһыҙ.* Ш. Янбаев.

**МӘТЛАБ** [*ғәр.*] *и. иҫк. кит.* Маҡсат, теләк. *Юҡ, ҡыҙыкма, алға атла, мәтлабың унда — ары.. Барыһынан бит һинең бер мәтлабың мең ҡат ғали!* Б. Мирзанов.

**МӘТЛУБ** [*ғәр.*] *с. иҫк. кит.* Талап ителгән; тейешле, кәрәкле. *Шул көйөнсә таш диуарҙар һаҡлауы мәтлуб ине.* Ш. Бабич.

**МӘТРҮК** [*ғәр.*] *с. иҫк. кит.* Ташланған; ташландыҡ. *Мәтрүк булыу.*

**МӘТРҮКӘ** [*ғәр.*] *и. иҫк. кит.* Үлгән кешенән ҡалған мираҫ. *Мәтрүкә малы.*

**МӘТРҮШКӘ** *и.* Ирен сәскәлеләр ғаиләһенә ҡараған хуш еҫле, алһыу күк төҫтәге өйкөм сәскәле ялан үләне. *Мәтрүшкә сәскәһе. Мәтрүшкә сәйе.* ■ *Булмай булмаҫ, май айында өҙгән мәтрүшкә лә барҙыр ауылда: дауаға тип әсәй йыя торған үлән кисеп Бүжә тауында.* В. Әхмәҙиев.

♦ **Һары мәтрүшкә** ваҡ һары сәскәле дарыу үләне.

**МӘТҺӘР** [*ғәр.*] *и. иҫк.* Дини хөрәфәтсә: үлгәндән һуң кешене гөнаһтарҙан таҙарта торған урын.

**МӘТӘЙЕС** *и. диал.* **1.** Мәскәй, убыр.

**2.** Кәрлә, иргәйел.

**МӘТӘЛ: мәтәл таяҡ** бура һәм ямғыр туп уйнағандағы бәләкәй таяҡ.

**МӘТӘЛДЕРЕҮ** *к. кар.* **мәтәлләтеү.**

**МӘТӘЛЕҮ** *к. кар.* **мәтәлләү.**

**МӘТӘЛЛӘТЕҮ** *к.* Баш түбән әйләндереп ҡолатыу; тәкмәстереү. *Тәүге һөжүмдә үк Рубцов бер коҙгондо мәтәлләтә, уның артынса Фидаи яндырған Юнкерс ут булып ергә тәгәрәй.* Б. Бикбай.

**МӘТӘЛЛӘҮ** *к.* Баш түбән әйләнеп ҡолау; тәкмәсеү. *Мәтәлләп китеү.* ■ *Бер ҡулы менән миләш ҡыуағын ҡосаҡлаған Батыр мәтәлләп барып төштө.* И. Ғиззәтуллин.

**МӘТӘЛӘНЕҮ** *к.* **1.** Ниҙелер йырып, ауа, йығыла барыу. *Тәрән ҡарҙа мәтәләнә-мәтәләнә һуҡмаҡ ярған ҡыр йәнлектәре лә бөгөн күренмәй.* Т. Хәйбуллин.

**2.** *диал.* Мәшәҡәтләнеү. *Мулланың айырым кабинеты буламы ни уның .. шул бер өйҙә мәтәләнергә тура килә.* Ф. Рәхимғолова.

**МӘТӘЛӘҮ** *к. диал. кар.* **һупалау** 2. *Уйынсыҡ гармун бер көйҙөң башын, икенсе көйҙөң аҙағын мәтәләргә генә яраклы.* С. Кулибай.

**МӘТӘҮКӘ** *и. диал.* Кәрлә, иргәйел.

**МӘҮЕШ** *с.* Йомшаҡ тәбиғәтле, булдыҡһыҙ; мәшәү. *Мәүеш кеше. Мәүеш булыу.* ■ *Исхаҡтың улы түгыҙ булған. Туғыҙы ла мәүеш, булдыҡһыҙ булған.* «Башҡорт легендалары», 1969.

**МӘҮЕШЛЕК** *и.* Мәүешкә хас сифат; булдыҡһыҙлыҡ. *[Шәмсун] Лилияға бәйләнеүенә үкенде, берсә үҙен мәүешлектә ғәйепләне.* Н. Мусин.

**МӘҮЖҮД** [*ғәр.*] *с. иҫк. кит.* Тормошта булған, реаль. *Араларыбыҙҙа мәүжүд булған шарттарға риза булып ҡул ҡуйған хаттарыбыҙ Ҡазан шәһәрендә дәфтәргә яҙылған.* «Башҡорт шәжәрәләре», 1960.

**МӘҮЖҮДӘТ** [*ғәр.*] *и. иҫк. кит.* Бар булған, реаль хәл; булмыш. *Бына! Хәҙер таң ата, һәба ҡутәрелә ҡара пәрҙә. Был мәүжүдәттәр алмашыналыр, тип күргәҙә сулпан.* С. Яҡшығолов.

**МӘҮКӘЙ** *с. диал.* Булдыҡһыҙ, мәүеш. *Мәүкәй кеше. Мәүкәй булыу.*

**МӘҮКИҒ** [*ғәр.*] *и. иҫк. кит.* Берәр эш йәки ваҡиға урыны.

**МӘҮҠИТ** [*ғәр.*] *и. иҫк. кит.* Билдәләнгән ваҡыт. *Якут кеүек мәүкиттең ҡәҙерен белмәй, үткәрмәгеҙ йәшлек ваҡытын арлы-бирле.* С. Яҡшығолов.

**МӘҮҠИФ** [*ғәр.*] *и. иҫк. кит.* Туҡталыу урыны; туҡталыш. *Мин шулай уйлап бара торғас, беренсе мәүкифте уҙып киткәнемде белмәй ҙә ҡалғанмын.* М. Ғафури.

**МӘҮЛЕН** *и.* Яҙҙың күк үлән сыҡҡан миҙгеле. *Яҙғы ла ғына килгән ас кәкүк саҡыра ла мәсен менән мәүлен башында* (Халыҡ йырынан).

**МӘҮЛИТ** [*ғәр.*] *и. иҫк. кит.* **1.** Кемдең дә булһа тыуған көнө.

**2.** (*баш хәреф менән*) Ир-ат исеме.

♦ **Мәүлит байрамы** Мөхәммәт пәйғәмбәрҙең тыуған көнө хөрмәтенә үткәрелгән дини байрам. **Мәүлит уҡыу** шул байрамға арналған доға уҡыу.

**МӘҮЛӘ** [*ғәр.*] *и.* **1.** Хоҙай, алла. *Ниңә йыумайһың, мәүләм, пакламайһың, аҡламайһың барлыҡ керҙәрҙе.* Б. Мирзанов. **Ҡадир мәүлә** алланы ололап әйтелә.

**2.** (*баш хәреф менән*) Ир-ат исеме.

**МӘҮСИМ** [*ғәр.*] *и. иҫк.* Айырым бер ваҡыт; миҙгел. *Йылдың мәүсимдәренә ҡарап изотерма үҙгәрә тора.* Ғ. Ғисмәти.

**МӘФТҮН** [*ғәр.*] *с. иҫк. кит.* Һоҡланып, таң-хайран ҡалған. *Мәфтүн булыу.* ■ *Мин дә Мөхәммәтйән әфәндинең үҙ милли шиғырҙарыбыҙҙы матур һәм асыҡ тауыш менән йырлауына мәфтүн булдым.* М. Ғафури.

**МӘФҺҮМ** [*ғәр.*] *и. иҫк. кит.* Мәғәнә, эстәлек. *Хаттың мәфһүме. Һүҙҙең мәфһүме.* ■ *Бейеүҙе һәр режиссёр көйҙөң мәфһүменә ҡарап яһарға хаклы.* М. Буранғолов. *[Егет:] Бер ҡарт мине һыйлап ебәрҙе, ғәжәпкә ҡалдым, мәфһүмен белмәнем* (Әкиәттән).

**МӘХБҮБ** [*ғәр.*] *с. кит.* Һөйөклө (иргә ҡарата). *Берәүҙең дошманы башкаға мәхбүб.* М. Ғафури.

**МӘХБҮБӘ** [*ғәр.*] *с. кит.* **1.** Һөйөклө (ҡатынға ҡарата).

**2.** (*баш хәреф менән*) Ҡатын-ҡыҙ исеме.

**МӘХБҮС** [*ғәр.*] *и. иҫк. кит.* Тотҡон. *Көнө-төнө тентеү бара. Унан да, бынан да тотоп ябалар. Бөтә төрмәләр мәхбүс менән тулы.* И. Насыри.

**МӘХБҮСХАНА** [*ғәр.* + *фарс.*] *иҫк. кит.* Тотҡондар йорто, зиндан.

**МӘХДҮМ** [*ғәр.*] *и. иҫк.* **1.** Дин әһеленең улы. *[Староста:] Тукһанбай кәрйәһендә имамлыҡ ит-*

*кән Камалетдин хәҙрәттең мәхдүме ҡасып китҡән.* К. Мәргән.

**2.** Дин әһелдәренә һәм уларҙың туғандарына хөрмәтләп өндәшеү һүҙе.

**МӘХДҮМӘ** [*ғәр.*] *и. иҫк.* Ди нәһеленең ҡыҙы. *Таһирйән Ғабдрахман хәҙрәттең мәхдүмәһен алып, мөдәррис булырға уйланы.* З. Һаҙый.

**МӘХЗҮН** [*ғәр.*] *с. иҫк. кит.* Ҡайғылы, моң-зарлы. *Быларҙың [коштарҙың] хуш ауаздары тауҙы-ташты ярып китер, нисә мәхзүн күңелдәрҙе йыуатыр, шөйлә шат итер.* С. Яҡшығолов.

**МӘХЗӘН** [*ғәр.*] *и. иҫк. кит.* **1.** Төрлө нәмә һаҡланған урын йәки бина; келәт. / *күсм.* Йәшереп һаҡланған хис-тойғоға ҡарата. *Үбер инем гөлдәй керпектәрен, сер мәхзәне нәркис күҙҙәрен.* Б. Мирзанов.

**2.** Магазин, кибет.

**МӘХКҮМ** [*ғәр.*] *с. иҫк. кит.* Хөкөм ителгән, хөкөм аҫтында булған, ғәйепле. *Мәхкүм кеше. Мәхкүм булыу.* ■ *Ишбулды менән Аҡбикә мәхкүм сифатында торалар. Ҡарамырҙа хаким мотлаҡ булып ары-бире йөрөп һөйләнә.* Х. Ғәбитов. / Нимәгәлер хөкөм ителгән, дусар булған. *Мәхкүм итеү.* ■ *Ала алмайым бит һулыш был тар бүлмәлә, тыуғанда уҡ мин шуға мәхкүмме әллә?* Я. Юмаев. *Һинең ғүмер, шағир,.. гөлдәй, мәхкүм ине иртә һулырға.* Ҡ. Даян.

**МӘХКӘМӘ** [*ғәр.*] *и. иҫк.* Хөкөм итә, хөкөм сығара торған орган һәм шул органдың төрлө эштәрҙе ҡарауы, тикшереүе; суд. *Мәхкәмә ҡарары.* ■ *Орскиҙа бер нисә көн буйы мәхкәмә тәфтише барҙы.* Ғ. Ибраһимов. *Халыҡ мәхкәмәһенә даими бер хаким менән нәүбәттәге ике заседатель кәрә.* «Совет Башҡортостанының ун йылы», 1929.

**МӘХЛУҠ** [*ғәр.*] *и.* **1.** (*йәки* **алла мәхлуғы**) Йән эйәһе. *[Атаулла:] Урманды ғына йәмләп йөрөгән мәхлуҡтарҙы атып, һунарсы данымды ебәрәһем юҡ.* Н. Мусин. *Дарья миҫле туп-тулылыр ер йөҙө мәхлуҡ илә.* Ғ. Соҡорой.

**2.** *күсм.* Меҫкен, бахыр. *Элек Мырҙаш Салиханы иркәләү өсөн яратылған бер мәхлуҡ ине. Хәҙер ул аҙап өсөн, ҡурҡыныс өсөн яратылған айыуға әйләнде.* Д. Юлтый.

**МӘХЛУҠАТ** [*ғәр.*] *и. иҫк.* Йән эйәләре, тереклек. *[Садиҡ:] Донъяның үҙенең ҡануны .. буйынса бөтә махлуҡат бер-береһе менән тартыша, көрәшә.* Ғ. Ниязбаев.

**МӘХМҮЛ** [*ғәр.*] *с. иҫк.* Йөкмәтелгән, йөк итеп алынған. *Бөтә һарай, бар хеҙмәтсе сәфәр менән мәшғүл ине. Ҡайҙа барма — ығы-зығы һарай, ғүйә, мәхмүл ине.* Н. Нәжми.

**МӘХМҮР** *с. һөйл.* Махмур.

**МӘХМҮТ** [*ғәр.*] *с. иҫк. кит.* **1.** Маҡтаулы. *Яҡшы уҡ мәғруф Хужа, мәхмүт Хужа.* Ш. Бабич.

**2.** (*баш хәреф менән*) Ир-ат исеме.

**МӘХРҮМ** [*ғәр.*] *с.* Берәй нәмәнән өлөшһөҙ, буш. *Бәхеттән мәхрүм булыу. Ирektән мәхрүм итеү.* ■ *Улар [ауылдар] йылғаның йәшеллектәрҙән мәхрүм яғын һайлап, .. һыу буйлап теҙелгән.* Ғ. Дәүләтшин. *Юлсы, меҫкен, тәмле йоконан мәхрүм.* Д. Юлтый. *[Сабир мулла:] Фытыр саҙаҡаларының күбеһенән мәхрүм ҡалыуыма ғәйәт тә ҡайғырам.* Б. Ишемғол. *Башҡорт ялпыһы электән иҙелгән, мәҙәниәттән, мәҙәни аҙыҡтан мәхрүм ителгән халыҡ.* Д. Юлтый.

♦ **Мәхрүм үксә** *диал.* сарыҡ. *Ҡуҙырлы ла ҡуныс мәхрүм үксә, бөгәренән һыға бәйләйҙәр* (Халыҡ йырынан).

**МӘХРҮМЛЕК** *и.* Тормош-көнкүрештәге етешһеҙлек; мохтажлыҡ. *Һуғыш йылдарында беҙ барыбыҙ ҙа ҙур ауырлыҡтар, мәхрүмлектәр кисерҙек.* Р. Янбулатова.

**МӘХРҮМСЕЛЕК** *и. кар.* **мәхрүмлек.** *Мәхрүмселек кисереү.*

**МӘХРӘМӘ** [*ғәр.*] *и. иҫк.* Ҡулъяулыҡ. *Алып сығайым сәхрәгә, бирер булһаң мәхрәмә* (Халыҡ йырынан).

**МӘХСҮД** [*ғәр.*] *и. иҫк. кит.* Көнсөллөк уятҡан кеше йәки нәмә. *Әхлаҡыбыҙ — мәрзиәне артҡа ташлап, мәхсүдте хаҡаратлап күңел баҫыу.* Аҡмулла.

**МӘХСҮЛ** [*ғәр.*] *и. иҫк. кит.* Эш һөҙөмтәһендә барлыҡҡа килгән нәмә; хеҙмәт емеше.

**МӘХСҮЛӘТ** [*ғәр.*] *и. иҫк. кит.* Эш һөҙөмтәһендә барлыҡҡа килгән нәмәләр. *Бер ерҙә табыла торған мәхсүләт сит яҡтарға оҙатыла.* Ғ. Ғисмәти.

**МӘХҮ: мәхү булыу** юғалыу, юҡ булыу. *Ҡар аҫтында мәхү булып ятҡан киң яландар донъяға сығып.., йәшәреп, ағастар япраҡ ярып, һандуғастар һайрап, кәкүктәр сакыра башланы.* З. Өммөти. **Мәхү итеү** юҡ итеү, бөтөрөү. *Ал ҡорал, бар, кит фронтҡа! Ит ләғиндәрҙе мәху.* Ш. Бабич.

**МӘХФҮЗ** [*ғәр.*] *с. иҫк. кит.* Һаҡланған, һаҡланыла торған. *Ер — һыуға грамота алдығыҙ һеҙ, һәр ҡайныһы диуандарҙа мәхфүз инде.* С. Яҡшығолов.

**МӘХШӘР** [*ғәр.*] *и.* **1.** (*йәки* **мәхшәр көнө**) Ислам дине хөрәфәтенсә: үлгән кешеләр кире терелеп сыҡҡан ваҡыт һәм улар йыйылған урын. *Мәхшәр көнө етте.* ■ *Аһ дәриға, мәхшәрҙә ни буласаҡбыҙ, йәшебеҙ үткән һайын күңелебеҙ йәш, тәүбәне һуңғараҡ ҡыласаҡбыҙ.* Аҡмулла. *Шау килә бар ер йөҙө, атты ғүйә мәхшәр таңы.* Д. Юлтый. *Көндөҙ мәхшәр кеүек ҡайнашып торған диңгеҙ буйы буп-буш.* Ғ. Байбурин. / Күмәк кешегә, шаулы төркөмгә ҡарата. *Мәхшәр эсендә.* // *Мәхшәр халыҡ.* ■ *Казарма яндарында мәхшәр булып, балаларын оҙатҡан ата-әсәләр, аталарын оҙатҡан йәш балалар тулды.* М. Ғафури. *Был тиклем мәхшәр халыҡ ҡайҙан йыйылған?* Р. Низамов.

**2.** *күсм.* Бик ныҡ буталсыҡлы хәл, шау-шыу, ығы-зығы, буталыш, бола. *Мәхшәр ҡуптарыу.* ■ *Ураҡсылар ҡайта ауылға. Һыйыр көтөүе килә. Быҙауҙар баҡыра. Ауыл ҡайнай, мәхшәр ауылда.* Ғ. Амантай. *Яланда мәхшәр. Ҡара ҡанатлы бомбалар һыҙғырып килеп төшәләр ҙә тупраҡты күккә күтәрәләр.* Ә. Ихсан. *Елдәр үлай, ҡарҙар туҙа, мәхшәр ҡуба.* Д. Юлтый.

**МӘХӘЛ** [*ғәр.*] *и. иҫк. кит.* Урын. *Мәсьәләне мәхәлдә хәл итеү.*

**МӘХӘЛЛИ** [*ғәр.*] *с. иҫк.* Билдәле бер урынға мөнәсәбәтле. *Мәхәлли власть бөтөнләй былар ҡулына күскән. Кантонда баш-баштаҡлыҡ сиктән ашҡан.* Ш. Хоҙайбирҙин.

**МӘХӘЛЛӘ** [*ғәр.*] *и. иҫк.* **1.** Ҡала йәки ауылдың бер мәсеткә ҡараған өлөшө. *Мәхәллә мул-*

*лаһы. Мәхәллә халкы.* ■ *Ғариф .. Өфөнөң тимер юл вокзалы янындағы бер мәхәлләнең имамын сакырып, Зарифтың йортонда икенсе көндө ук никах уҡытты.* Ғ. Хәйри.

**2.** Урамдың бер өлөшө; квартал.

**МӘҺАБӘТ** *с. кар.* **мөһабәт.**

**МӘҺАРӘТ** [*ғәр.*] *и. иҫк. кит.* Ниндәйҙер эшкә булған оҫталыҡ, һәләтлек. *[Биктаһир:] Ярты сәнә тигәндә тамам бухгалтерия ғилеменә мәһарәт кәсеп иттем.* З. Өмməти.

**МӘҺЛӘКӘ** [*ғәр.*] *и. иҫк. кит.* **1.** Һәләкәтле, афәтле урын.

**2.** Һәләкәт. *Нурсәйеттең бер калмаҡ катыны бар ине, Хәмәлә ине. Шул катын мәһләкәнән ҡасып, төркмәнгә килде, төркмән катыны булды. Хәмәләнән Сәйҙәш атлы ул тыуҙы.* «Башҡорт шәжәрәләре», 1960.

**МӘҺӘДИ** [*ғәр.*] *и. иҫк. кит.* **1.** Тоғро юлда булған кеше.

**2.** (*баш хәреф менән*) Ир-ат исеме.

**МӘҺӘР** [*ғәр.*] *и.* Никах ваҡытында егет яғынан ҡыҙ яғына бирелә торған мал; ҡалын. *Мәһәр аҡсаһы. Мәһәр алыу. Мәһәр һалыу. Мәһәр һорау.* ■ *Нурияны мулланың гәрип улына йәрәштеләр.. Мәһәр хаҡына мулла уға [Вахит ҡартҡа] бер тыуса һыйыр, ун һарыҡ, бер тышлы тун .. вәғәҙә иткәйне.* К. Мәргән.

**МӘҺӘРЛЕК** *и.* Мәһәр өсөн тәғәйенләнгән мал. *Мәһәрлек әҙерләү. // Мәһәрлек аҡса.* ■ *[Айсыуаҡ:] Мәһәрлек мал кәрәк, Ишмай ағай. Бына көнө-төнө шуға тырышам.* Ҡ. Даян.

**МӘҺӘРЛӘШЕҮ** *к.* Мәһәр алып, мәһәр бирешеү.— *Аҡһаҡ тимер ҡыҙҙың аталары менән мәһәрләшеп, ризалашып үҙ иленә ҡайтып киткән* (Легенданан).

**МӘШ:** **мәш килеү** *шул уҡ* **мәж килеү** (*кар.* **мәж**). *Кешеләрҙең ығы-зығы килеп, мал-тыуар менән мәш килеп йөрөгән мәле.* В. Исхаҡов.

**МӘШҒҮЛ** [*ғәр.*] *с.* Ниндәйҙер эш менән шөғөлләнгән, булышҡан; *Изге эш менән мәшғүл кешегә ихтирам кәрәк бит инде.* И. Насыри. *Һәр ҡайныһы үҙ башынан үткән бәләне, күргән йәбер-яфаны уйлау менән мәшғүл ине.* Б. Мирзанов. *Балыҡтар һикерешеүендә, ҡоштар һайрашыуында, малайҙар мурҙа уреүендә булды. Һәр кем үҙ һөнәре менән мәшғүл ине.* М. Кәрим.

□ **Мәшғүл булыу** берәй нәмә менән шөғөлләнеү. *Кешеләр донъя мәшәкәттәре, хужалыҡ хәстәре менән мәшғүл булып китте.* Я. Вәлиев. **Мәшғүл итеү** (*йәки* **кылыу**) ни менәндер шөғөлләндереү. *Я илаһым, .. үҙеңә яҡын итә торған зекерҙәр менән мәшғүл ҡыл.* М. Өмөтбаев.

**МӘШҒҮЛЛӘНЕҮ** *к.* Мәшғүл булыу, шөғөлләнеү. *Өй эше менән мәшғүлләнеү.*

**МӘШКӘ** [1] *и. диал.* **1.** Бәшмәк. *Мәшкә йыйыу.*

**2.** Бөкө, тығын.

**МӘШКӘ** [2] *и. диал.* Зәңге.

**МӘШКӘК** *и. диал.* Бәшмәк.

**МӘШҠИ** [*ғәр.*] *иҫк. кит.:* **мәшҡи яҙыу** матур яҙыу. *Конверт эсендәге ҡағыҙҙа Диния назаратының штампы баҫылған, мәшҡи яҙыу менән оҙон хат яҙылған, мөфтиҙең ҡулы ҡуйылған.* А. Таһиров. **Мәшҡи ҡәләм** матур яҙыу ҡәләме.

**МӘШ-МӘШӘ:** **мәш-мәшә килеү** *шул уҡ* **мәж килеү** (*кар.* **мәж**).

**МӘШРИҠ** [*ғәр.*] *и. иҫк.* Ҡояш сыға торған яҡ; көнсығыш. *[Сафый:] Вокзалға килеп төшкәс ҡараһам, иҫ-аҡылдарымдан яҙҙым: мәғрипкә бараһы урынға мәшриҡҡа китеп, бөтөнләй икенсе ҡалаға килеп төшкәнмен.* Х. Ибраһимов. *Мәшриҡтан ғына сыҡҡан ҡояш, мәғрипкә лә барып байыйҙыр* (Халыҡ йырынан).

◆ **Береһе мәғрипкә, береһе мәшриҡҡа ҡарау** *кар.* **мәғрип.**

**МӘШРУТ** [*ғәр.*] *с. иҫк. кит.* Билдәле бер шартҡа бәйле, шартҡа ярашлы булған; шартлы. *Мәғнәүи дуҫҡа мәҡамда иттихад мәшрут имәс.* Аҡмулла.

**МӘШРӘБӘ** [*ғәр.*] *и. иҫк. кит.* Һыу эсә торған һауыт. *Бәхетенә тоткарлыҡ юҡ, беләһегеҙме? Бар ғаләм белеп тора мәшрәбәһен.* Аҡмулла.

**МӘШҺҮР** [*ғәр.*] *с.* Халыҡ араһында танылған; шөһрәт ҡаҙанған, күренекле. *Мәшһүр ғалим. Мәшһүр яҙыусы.* ■ *Ҡыйышҡы ауылы беҙҙең тирәлә үҙенең данлыҡлы мәҙрәсәләре, .. мантиҡ һәм ғилмекаләм фәндәрен уҡытыуы менән мәшһүр.* М. Ғафури. *И, мәшһүр хан, затлы ил тажы, бер үҙеңдә илдең мохтажы!* М. Кәрим.

□ **Мәшһүр булыу** танылыу. *Бынан һуң Заятүләк шул тирәгә мәшһүр булды.* «Заятүләк менән Һыуһылыу».

**МӘШҺҮРЛЕК** *и.* Мәшһүр булған хәл, шөһрәт ҡаҙанғанлыҡ.

**МӘШӘҠӘТ** [*ғәр.*] *и.* **1.** Ҡамасау яһап, эш-хәлде ҡатмарлаштырған ҡыйынлыҡ; оронсоҡ. *Мәшәҡәт сығарыу, Мәшәҡәт булыу. Мәшәҡәт яһау.* ■ *Күп урында сокорҙарҙы уратып үтергә, үр менгәндә арбаларҙы этешергә тура килде. Ошондай мәшәҡәттәр менән станцияға .. барып индек.* Й. Солтанов.

**2.** Нимә менәндер бәйле тынғыһыҙ, ығы-зығылы эш. *Йорт мәшәҡәте. Ҡунаҡ мәшәҡәте.* ■ *Заятүләктең көндәре донъя мәшәҡәте менән үтә.* «Заятүләк менән Һыуһылыу». / Эш-хәлдәге ҡыйынлыҡтар тураһындағы төрлө уй. *[Колмәт ағай] бөтә мәшәҡәттәрен күтәреп правлениеға барҙы.* К. Мәргән. *Барып башҡорт хәлен һөйләп хакимгә, нисә төрлө мәшәҡәттәр башында* (Бәйеттән).

● *Улһыҙҙың мәшәҡәте бер булыр, уллының мәшәҡәте ун булыр.* Әйтем.

**МӘШӘҠӘТЛЕ** *с.* **1.** Күп ҡамасау, ҡыйынлыҡ килтергән; ҡатмарлы, ауыр. *Мәшәҡәтле эш. Мәшәҡәтле юл. Мәшәҡәтле булыу.* ■ *[Үтәгәнов:] Дөрөҫ, базалағы эш мәшәҡәтле, яуаплы. Теге тауар етешмәй, был тауар үтмәй..* И. Абдуллин.

**2.** Тынғыһыҙ, ығы-зығылы, борсоулы. *Мәшәҡәтле тормош. Мәшәҡәтле донъя.* ■ *9 июль көнө үтә мәшәҡәтле булды. Яңы урында биләнгән позицияларҙы бик ашығыс нығытырға тура килде.* Ә. Ихсан. / Ҙур, яуаплы эш менән мәшғүл булған. *Мәшәҡәтле сак. Мәшәҡәтле йыл.*

**МӘШӘҠӘТЛЕК** *и.* Эш-хәлде ауырлаштырған, ҡатмарлаштырған төрлө ҡаршылыҡ. *Мәшәҡәтлек тыуҙырыу. Мәшәҡәтлек менән донъя көтөү.*

**МӘШӘҠӘТЛӘНДЕРЕҮ** *к.* Мәшәҡәтләнергә мәжбүр итеү, мәшәҡәтле итеү.

**МӘШӘҠӘТЛӘНЕҮ** *к.* **1.** Мәшәҡәтле эш менән аҙапланыу, ыҙаланыу.— *Алдағы йыл беҙҙең кирбес заводыбыҙ була. Саман менән мәшәҡәтләнеү етәр.* Ә. Вәли. *Ҡара бесәй бер ҙә сыскан-маҙар тотоп мәшәҡәтләнмәгән* (Әкиәттән).

**2.** Ваҡ-төйәк эш менән булыу, эшләп булашыу. *Хәсби ҡыуыш эргәһендә һауыт-һабаһы менән мәшәҡәтләнә.* Ҡ. Даян.

◆ **Мәшәҡәтләнмәгеҙ!** мәшәҡәт яһамаҫҡа, кемделер борсомаҫҡа теләгәндә әйтелә. *[Сәғиҙә:] Оҙатып мәшәҡәтләнмәгеҙ, үҙем генә ҡайтырмын.* М. Тажи.

**МӘШӘҠӘТЛӘҮ** *к.* Ҡамасау яһау; ҡамасаулау. *Мәшәҡәтләп йөрөү.*

**МӘШӘҠӘТҺЕҘ** *с.* **1.** Төрлө ҡыйынлыҡтары, ҡамасауы булмаған. *Мәшәҡәтһеҙ эш. // Мәшәҡәтһеҙ йөрөп ҡайтыу.*

**2.** Сағыштырмаса тыныс булған, төрлө мәшәҡәттәр борсомаған. *Мәшәҡәтһеҙ донъя. Мәшәҡәтһеҙ саҡ.*

**МӘШӘЛӘНЕҮ** *к. һөйл.* Оҙаҡ булышыу, яй маташыу. *Мәшәләнә торғас, һуңланы.*

**МӘШӘҮ** [1] *с.* **1.** Тиҙ генә төшөнөп, тиҙ генә эшләү һәләтенән мәхрүм; булдыҡһыҙ, аңра. *Мәшәү кеше. Мәшәү булыу. // Йылҡы көтөү айырыуса ҡыйын.. Ҡайҙа ул мәшәү аҡ ҡулдарға быңдай эшкә күндәм булырға.* А. Игебаев.

**2.** Йонсоған, арыҡ (малға ҡарата). *Мәшәү ат.*

**МӘШӘҮ** [2] *к. һөйл.* Булдыҡһыҙға, аңраға әйләнеү; миңрәүләнеү.— *Йәтимлек баҫып мәшәп киткән.* Т. Морат.

**МӘШӘҮЛӘНЕҮ** *к. һөйл.* Мәшәүгә әйләнеү, мәшәү булыу. *Быҙауығыҙ ҡалай мәшәүләнеп киткән, ауырыймы әллә?* Т. Морат.

**МӘЬЖҮЖ** [*ғәр.*] *и. иҫк.* Дини хөрәфәт буйынса: ахыры заман алдынан ер өҫтөнә сығасаҡ мифик халыҡ исеме.

**МӘЬЙУС** [*ғәр.*] *с. иҫк. кит.* Өмөтһеҙ, өмөтө өҙөлгән. *Мәьйүс кеше. Мәьйүс булыу.* ■ *Ярлы башҡорт көйөп, мәьйүс булып, һыйыныргa урын тапманы.* Х. Ғәбитов.

**МӘЬЙҮСИӘТ** [*ғәр.*] *и. иҫк. кит.* Өмөтһеҙлек. *Барлыҡ мәьйүсиәт, хәсрәт, ҡайғы урынлашҡанмы минең күңелгә.* С. Ҡудаш.

**МӘЬМҮР** *и. иҫк.* Вазифалы кеше. *Шул көнө үк бер нисә рус байы менән бер нисә мәьмүр килеп, Һибәттең ауылдағы һәм баҙарҙағы дөкәнен яҙып мисәтләне.* А. Таһиров.

**МӘЬМҮРИӘТ** [*ғәр.*] *и. иҫк.* **1.** Рәсми эш урыны, вазифа.

**2.** Башында мәьмүр торған рәсми эш ойошмаһы.

**МӘЬМӘЙ: мәьмәй итеү** *бал.* һуғыу, сыптырыу. *[Роза:] Ҡара, Сәлих, .. башҡаларға күҙеңде төшөрмә, мәьмәй итермен.* С. Агиш.

**МЯСОРУ́БКА** [*рус.*] *и.* Ит йәки бүтән нәмәне ваҡ итеп турап, һығып сығара торған ҡорал; ит үткәргес. *Мясорубка бысағы. Мясорубканан үткәреү.*